Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл
№ 64 (8781)
1
АПРЕЛЬ
йәкшәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ЯҘҒЫ СӘСЕҮГӘ ӘҘЕРЛЕКТЕ ТИКШЕРӘБЕҘ. У. Камалов. — Сортлы орлоҡтар алмаштырып алыу эше әҙәклектә (1-се бит).
КОММУНИЗМДЕҢ БӨЙӨК ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ (1-се бит).
МАЙ АЛДЫ СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШЫ. И. Болдогов. — Бөйөк Сталинға биргән вәғәҙәне үтәп (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Д. Гырдашев, М. Баранов. — Яҙғы сәсеүгә әҙерлекке етәкселекте көсәйтергә (2-се бит).
Д. Юлмөхәмәтов. — Массовый-политик эшкә күберәк иғтибар (2-се бит).
Ә. Әхмәтов. — Һәр бер колхозда яҙғы сәсеү осорона конкрет эш планы булырға (2-се бит).
ОБОРУДОВАНИЕЛӘРҘЕҢ ФАЙҘАЛАНЫЛЫУЫН ТИКШЕРӘБЕҘ. Т. Миннибаев, А. Иленаев, Б. Мөрзәгәлиев. — Бөтә механизацияны — төҙөлөш линияһына (2-се бит).
ДРАМАТУРГ-КОМПОЗИТОР — ХӘБИБУЛЛА ИБРАҺИМОВ ИЖАДЫ.
С. Әгиш. — Искусствоның ҡарт мастеры (3-сө бит).
С. Нудаш. — Рәхмәт сәләме (3-сө бит).
Г. Миннажев. — Бер роҙҙа егерме ете йыл (3-сө бит).
Ә. Зәбиров. — Яңы уңыштар теләйбеҙ (3-сө бит).
Р. Байназарова. — Иҫке тормошҡа сатира (3-сө бит).
Специалист кәңәштәре. Б. Шиленко. — Гранул ашламалар — мул урожай үстереүҙә мөһим сара (4-се бит).
В. Харьков. — Япония — Азияла Америка агрессияһының базаһы (4-се бит).

Сауҙа работниктәренең социалистик ярышына оператив етәкселек итергә

...коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте хеҙмәтсәндәрҙең материаль көнкүрешен яҡшыртыу өсөн даими хәстәрлек күрә. Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына хаҡтарҙы әленән-әле кәметә барыу ошо хәстәрлектең гүзәл сағылышы булып тора. Халыҡ хужалығының йылдам үсеүе, хеҙмәт етештереүсәнлегенең күтәрелеүе һәм продукцияның хаҡын төшөрөү хаҡының түбәнәйеүе һөҙөмтәһендә илебеҙҙә һуңғы осор эсендә массовый ҡулланыу тауарҙарының хаҡтарына дүртенсе тапҡыр арзанайтыу үткәрелде инде. Совет хөкүмәтенең һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының ҡарары нигеҙендә 1951 йылдың 1 мартынан массовый ҡулланыу тауарҙары хаҡтарын төшөрөү арҡаһында бер йыл эсендә 27,5 миллиард һум халыҡ отош аласаҡ. Халыҡтың тормошон яҡшыртыуға йүнәлдерелгән ошо ҙур саралар тыныс төҙөлөш эшен ...ләнгән һәм халыҡ хужалығы ... үҫкән беҙҙең Совет социалистик ... ғына тормошҡа ашырыла ала һәм ...ла.

Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары хаҡтарын арзанайтыу совет һатып алыу һәләтлелеген тағы күтәрҙе. Халыҡтың тауарға һорауы тағы ла күберәк артты. ... ҡалаһында, арзанайтылған яңы хаҡ ... сауҙа итеүҙең тәүге 15 көнө ..., үткән февраль айының ошо осо... сағыштырғанда, колбаса изделиеләре ... тапҡырға, мал майы бер ..., велосипедтар һигеҙ, радиоприемниктар ун, мотоциклдар ун ике тапҡыр күберәк һатылдылар.

Хеҙмәтсәндәрҙең материаль тормош кимәле әленән-әле күтәрелә барыуы менән ... юғары сортлы һәм киң ассортиментлы тауарҙарға һорауҙары үҫә. Был ... республикала сауҙа ойошма... [illegible]

«Совет сауҙаһы — безҙең үҙ эшебеҙ, тыуған эшебеҙ, большевистик эшебеҙ, а сауҙа работниктәре, шул иҫәптән ... — безҙең революцион, большевистик эшебеҙҙе алып барыусылар», — тип өйрәтә иптәш Сталин.

Республикабыҙҙың государство һәм кооператив сауҙаһы ойошмалары ... [illegible]

Башҡортостан потребкооперация работниктәре Татарстан кооперация работниктәре менән ярыша ... 1951 ... [illegible]

... йыйылған сауҙа предприятиеһе тарафынан тауар әйләнешө планын үтәп барырға тиешле бурыс ҡуйылғайны.

Ләкин, үкенескә ҡаршы, быйыл күп кенә урындарҙа социалистик ярыштың формаль ойошторолоуы арҡаһында был йөкләмәләр тейешле тормошҡа ашырылмайынса, вәғәҙә булып ҡына ҡала киләләр. Работниктар һәм коллективтар араһында төҙөлгән социалистик ярыш договорҙарының үтәлештәре күп кенә сельпо, райпотребсоюз правлениелары һәм етәкселәре, профсоюз ойошмалары тарафынан хатта айҙар буйына тикшерелмәйҙәр. Ул йыш ҡына ваҡиғала ҡағыҙҙа тороп ҡала. Һуңғы ваҡыттарҙа Бәләбәй, Әлшәй, Федоровка һәм Илеш район потребкооперацияларында ярышты үҙ ағышына тапшырғандар. Был райпотребсоюздарҙың етәкселәре һәм ундағы тәүге партия, профсоюз ойошмалары социалистик ярыштың әһәмиәтен баһалап еткермәйҙәр.

Күп кенә райондарҙың сауҙа точкаларында культура түбән. Магазин һәм лавкаларҙың эсе таҙа тотолмай, бысраҡ була. Потребителдәрҙең һорауҙары өйрәнелмәй һәм иҫәпкә алынмайҙар. Һөҙөмтәлә сауҙа селторҙәре был урында талап ителмәгән тауарҙар менән тултырыла. Бындай фактар Әлшәй райпотребсоюзында, уның Шафран сельпоһында һәм башҡа райондарҙа бар. Был хәл оборот средстволарының әйләнешен аҡрынайта. Сауҙа эшенең ҡәнәғәтләнмәҫлек ҡуйылыуы ғинуар һәм февраль айҙарындағы кеүек үк, март айы тауар әйләнеше планын да үтәп еткермәүгә килтерҙе.

Системаның түбәнге звеноларында ярыштың һүлпән тороуы шулай уҡ Башпотребсоюз Правлениеһенең дә, потребкооперация работниктәре профсоюзы Өлкә Комитетенең дә был мөһим мәсьәлә менән аҙ шөғөлләнеүҙәренән, уға конкрет һәм оператив етәкселек итмәүҙәренән килә. Эш, ғәзиттә күрһәтмәләр төшөрөү, квартал үткәс йомғаҡ яһап, ҡарарҙар ебәреү менән сикләнелә. Урындарға сыҡҡан работниктар ҙа ярыштың ойошторолоуы ... [illegible]

Башҡорт АССР-ы Сауҙа министрлығы ... [illegible]

Потребителдәрҙең интересстарына ... [illegible]

Алынған йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү — ... [illegible]

Культуралы совет сауҙаһын ... [illegible] ... төрлө ... бөтә работниктәрҙе мобилизовать итеү — урындағы Советтарҙың, уларҙың даими комиссияларының һәм партияның тәүге ойошмаларының мөһим бурысы булып тора.

Ш. М. Ғатауллинде Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары итеп билдәләү тураһында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының УКАЗЫ

Иптәш Шаих Мырҙа улы Ғатауллинде Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары итеп билдәләргә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе
Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Секретаре вазифаларын үтәүсе И. ЙОРҺАЕВ.

Өфө ҡалаһы, 31 март 1951 йыл.

ЯҘҒЫ СӘСЕҮГӘ ӘҘЕРЛЕКТЕ ТИКШЕРӘБЕҘ

Сортлы орлоҡтар алмаштырып алыу эше әҙәклектә

Республикабыҙ колхоздары һәм совхоздары алдында бөтә майҙандар һәм культуралар буйынса сортлы орлоҡтар сәсеүгә күсеүҙе тәьмин итеү бурысы тора. Был бурысты үтәүҙә государство тарафынан ҙур ярҙам күрһәтелә. Башҡортостан колхоздарына һәм совхоздарына үҙҙәрендәге сортһыҙ ябай орлоҡтарҙы, шулай уҡ сығышы яғынан яраҡһыҙ орлоҡтарҙы государство ресурстарындағы сортлы орлоҡтарға алмаштырып алыу былтыр көҙ үк рөхсәт ителде. Ләкин күп кенә ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, күпселек райондарҙа орлоҡтарҙы алмаштырып алыу эше кәрәгәтләнерлек алып барылмай.

Белоҡатай районы колхоздары быйыл 1500 центнер сортлы орлоҡ алырға һәм 11 мең центнер орлоҡто яҡшы шытымлы сортлы орлоҡҡа алмаштырып алырға тейеш. Ләкин районда был эшкә кәрәкле иғтибар итеймәй. Район Советы исполкомы председателе иптәш Шевелев эштең барышына контроль яһамай. Шул арҡала сортлы орлоҡтар алмаштырып алыу эше үҙ ағышына ташланған. Алыштырыуға билдәләнгән орлоҡтарҙы таҙартыу ойошторолмай. Районда «Социализм» һәм Салауат исемендәге артелдарҙан башҡа бер генә колхоз да орлоҡто алмаштырыуҙы тиҙләтеү сараһын күрмәй. Һөҙөмтәлә ни бары 210 центнер генә орлоҡ алмаштырылған.

Республикала күп кенә райондар сортлы орлоҡтарҙы алмаштырып алыу эшен әле булһа башламағандар. Әбйәлил, Баймаҡ, Дыуан, Краснокам, Матрай, Мишкә һәм Мияҡы райондары шундайҙар иҫәбенә инә. Шулай итеп, был райондар республиканың яҙғы сәсеүгә әҙерлеген тамамлауға ҙур тотҡарлыҡ яһайҙар. Һөҙөмтәлә был көнгәсә Башҡортостан колхоздарында сортлы орлоҡтар алмаштырып алыу планы 27,6 процентка, совхоздарҙа 36 процентка ғына үтәлде.

Был эштең оҙаҡҡа һуҙылыуына сик ҡуйырға кәрәк. Бының өсөн колхоздарҙа һәм совхоздарҙа орлоҡтарҙы сәсеү кондицияһына еткереү эштәрен алып барыу менән бергә, сығышы, сорты яғынан сәсеүгә яраҡһыҙ орлоҡтарҙы алмаштырыу өсөн таҙартыуҙарҙы киң йәйелдерергә кәрәк. Сөнки ундай орлоҡтар, тик таҙартылған булһалар ғына, сортлыға алмаштырылалар. Яҙғы эш ҡалғанға тиклем орлоҡ алмаштырып алыуҙы тәьмин итеү өсөн колхоздарҙың, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың иген таҙартҡыс машиналарын тулы ҡеүәтендә файҙаланырға, орлоҡ ташып алыу өсөн транспортты ойошторорға кәрәк.

Райондарҙа партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары сортлы орлоҡтар алыштырып алыуҙы үҙ ваҡытында тәьмин итеү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр.

У. Камалов.

Сәсеүгә әҙерлекте һынау

Беҙҙең ауыл хужалығы артеле члендәре әрелтелгән колхоз баҫыуҙарында быйыл беренсе яҙғы сәсеүҙе үткәреүгә айырыуса яҡшы әҙерләнделәр.

Сәсеү майҙанының киңәйеүе, баҫыусылыҡ бригадаларының әрелтелеүе, шулай уҡ механизацияның ныҡ үҫеүе шарттарында яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа, яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн яҙғы баҫыу эштәренең алдан дөрөҫ планлаштырылыуы талап ителә. Шуға күрә беҙ был яуаплы осор өсөн конкрет план төҙөнөк. Был план баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларында ентекләп тикшерелде һәм өйрәнелде.

Ошо көндәрҙә генә колхозда сәсеүгә әҙерлеккә һынау сығышы үткәрелде. Унда бөтә баҫыусылыҡ бригадалары ла ҡатнашты һәм был һынау сығышы колхоздың, шулай уҡ бөтә баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының яҙғы сәсеүгә бөгөндән әҙер булыуҙарын күрһәтте.

Яҡшы сифатлы сәсеү материалдары әҙерләүгә айырыуса иғтибар бирҙек. Улар ентекләп таҙартылдылар, анализдан үткәрелделәр. Һәм хәҙер беҙ бойҙай орлоғон ағыулауға башланыҡ.

Ауыл хужалығы инвентарҙәре, сбруйҙар тулыһынса етерлек итеп әҙерләнде. Быйыл трактор бригадаһының сәғәт графиге менән эшләүен күҙ уңында тотоп, уны хеҙмәтләндереү персоналдары — прицепщиктарҙы, орлоҡ, яғыулыҡ, һыу ташыусыларҙы һайлап алыуға етди иғтибар бирҙек. Яҙғы баҫыу эштәре осорона етерлек яғыулыҡ ташып ҡуйҙыҡ.

Беҙ тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә эшләтеү менән бергә сәсеүҙе бер нисә көн әсендә тамамлау өсөн йәнле тартыу көстәрен дә файҙаланасаҡбыҙ. Беҙҙә бөтә эш аттары ла яҡшы көрлектә. Һәм яҙғы сәсеү осорона улар өсөн 400 центнер фураж бүлеп ҡуйҙыҡ.

Хәҙер беҙ колхоз баҫыуҙарында нисек тә күберәк дым туплап ҡалыу маҡсатында ҡар һыуҙары тотоуға башланыҡ. Бер нисә көндән ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу эштәренә тотонасаҡбыҙ. Был сара быйыл ҙур майҙандарҙа үткәреләсәк. Минераль ашлама менән янған тиреҫте бергә ҡушып, гранул ашламалар әҙерләйбеҙ. Хәҙер 60 центнер гранул ашлама әҙерләнек.

М. Шәфиҡов,
Туймазы районы Ленин исемендәге колхоз председателе.

Орлоҡтарҙы сәсеүгә әҙерләмәйҙәр

Учалы районы колхоздары орлоҡтарҙы сәсеүгә әҙерләүҙә артта ҡалалар. «Правда» колхозында 22 процент еүешлектә һаҡланыу арҡаһында 1000 центнер бойҙай орлоғонон 380 центнеры сығышын юғалтҡан. Бында шулай уҡ 134 центнер һоло орлоғо сәсеүгә яраҡһыҙ булып тора. Ләкин колхоз председателе иптәш Ғәлиев орлоҡтарҙы эшкәртеү, ҡояшта киптереү, яраҡһыҙ орлоҡтарҙы государство фондындағы яҡшы сифатлы орлоҡтарға алмаштырып алыу сараһын күрмәй.

Сталин исемендәге колхозда 323 центнер бойҙай орлоғо 20 процент еүешлектә һаҡлана. Бында шулай уҡ 5 центнер борсаҡтың еүешлеге 23 процент тәшкил итә. Был орлоҡтарҙың күп өлөшө боҙолған.

«Рысай» колхозында ғинуар айында һуғылып алынған арпа орлоғо 23 процент еүешлектә һаҡланыу арҡаһында сәсеүгә яраҡлылығын юғалтҡан. Колхоз председателе иптәш Әюпов инженер Гоголев системаһындағы сушилка була тороп, орлоҡтарҙың боҙолоуына юл ҡуйҙы. «Коммунар» колхозында орлоҡсолоҡ участкаһының былтырғы ашлыҡтары ошо көнгәсә һуғылып алынмаған.

«Ирәндек» колхозында 1136 центнер бойҙай, 1077 центнер һоло, 26 центнер арпа артыҡ еүешле булыуы менән кондицияһыҙ булып тора. Колхозда 4 триер бар, ләкин улар насар файҙаланыла.

Учалы МТС-ы (директоры иптәш Дураков) орлоҡ таҙартҡыс машиналарын колхоздарға дөрөҫ бүлмәне. Мәсәлән, «Урнәк» колхозының 3 триере бар. Шулай булһа ла, МТС «ВИМ» машинаһын ошо колхозға ебәргән. Ул да тейешле ҡеүәтендә файҙаланылмай.

Учалы районы колхоздарында сәсеү орлоҡтарын әҙерләүҙе тиҙ көндәрҙә тәьмин итергә кәрәк.

М. Әһлиуллин.

Ҡар һыуҙары тотола

Бүздәк. Андреев исемендәге колхоз (председателе иптәш Слющенко) һөҙәк майҙанлы баҫыуҙарҙа һыуҙарҙы тотоп ҡалыу сараларын ойоштороҙо. Бындай баҫыуҙарҙа ҡара ерҙе асылған полосалар булдырыу маҡсатында һөҙәклектәргә арҡыры килтереп, полосалап көл һибелде. 28 мартта, баҫыуға сығыуҙың тәүге көнөндә, 50 гектар майҙанда ҡар һыуҙарын тотҡос полосалар эшләнде. Яҙғы агротехник сараларҙы ойоштороуҙа колхоз агротехнигы иптәш Киселев тырышып эшләй.

Колхозда быйыл яҙ 320 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырыласаҡ. Бөтә был майҙанды тулыһынса тәьмин итерлек күләмдә органик-минераль ашламалар гранулы әҙерләнде.

Май алды социалистик ярышы

Бөйөк Сталинға биргән вәғәҙәне үтәп

Октябрьский. Ленин орденле «Туймазынефть» тресының нефть промыселдарында ҡаланың юбилейе һәм 1 Май байрамы хөрмәтенә социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Нефтселәр Октябрьский ҡалаһының биш йыллығын достойн ҡаршылау өсөн көрәшәләр. Социалистик ярыш: «Иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне намыҫ менән үтәрбеҙ!» тигән лозунг аҫтында алып барыла.

1-се номерлы промыселдың нефтселәре I квартал планын срогынан алда үтәнеләр. Участка һәм бригадалар араһында нефть сығарыу өсөн булған ярышта мастер Завьялов һәм Мөхәмәтшин иптәштәр етәкселек иткән участкалар алдынғы сафта баралар. Улар нефть сығарыуҙы тәүлек заданиеһен системалы рәүештә арттырып үтәйҙәр.

Иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәне 2-се номерлы промысел коллективы ла уңышлы үтәй. Промысел март айы планынан тыш бер нисә эшелон нефть бирҙе. Участка мастерҙары Ғабашин, Баренов һәм Хәсәнов иптәштәр нефть сығарыу планын арттырыу менән бергә, бер нисә ун мең һум средствоға экономия яһанылар. Участкаларҙағы бөтә скважиналар ҙа туҡтауһыҙ эшләйҙәр.

Туймазы нефтселәренең уңыштары, уларҙың новаторлыҡ эштәре менән илебеҙҙең нефтселәре ҡыҙыҡһына. Ошо көндәрҙә Куйбышев һәм туғандаш Татарстан республикаһы нефтселәренең вәкилдәре Октябрьский ҡалаһына килделәр. Ҡунаҡтар Башҡортостандың алдынғы нефтселәренең гүзәл эш тәжрибәләрен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнәләр.

И. Болдогов.

Стахановсы цех өсөн

Шакша протез заводы производство программаһын айҙан-айға уңышлы үтәй. Ул быйылғы йылдың тәүге өс айлыҡ планын уңышлы үтәүгә өлгәште. Заводта һәр бер икенсе кеше стахановсы.

Коллектив Өфө электр оборудованиелары заводы коллективы өлгөһөндә май алды социалистик ярышына ҡушылды. Ул дүрт айлыҡ производство программаһын срогынан алда — 20 апрелгә үтәү өсөн йөкләмә алды.

Эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәр араһында ла индивидуаль ярыш йәйелдерелде. Стахановсы иптәш Приходько 1 Май хөрмәтенә көн һайын 1,5 — 2 норма үтәргә һүҙ бирҙе. Иптәш Приходько, заводтың башҡа стахановсылары кеүек, социалистик ярыштың тәүге көнөнән үк икешәр норма биреп эшләй. Бөтә цех коллективтары 1 Майға тиклем стахановсы цех исемен алыу өсөн көрәшәләр.

М. Баранов,
ВКП(б)-ның Өфө район комитеты пропагандисы.

КОММУНИЗМДЕҢ БӨЙӨК ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ



Украина ССР-ы. Ново-Краматорскиҙағы Сталин исемендәге машиналар төҙөү заводы производствола яңы еңеүгә өлгәште. Бында 15 кублы экскаватор эшләнде. Уның бейеклеге 33 метр. Ул ер эштәрендә 7 мең кешене алмаштырасаҡ. Яҡын ваҡытта был ҡеүәтле машиналарҙың беренсе партияһы Волга ярҙарында эшләй башлаясаҡ.

Һүрәттә: экскаваторҙың дөйөм күренеше.

И. Бондаренко фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Йөктәр ҡабул итеү өсөн пристань

ТАХИА-ТАШ (ҠАРА-ҠАЛПАҠ АССР-ы). Буласаҡ гидроузел районында Аму-Дарья боҙҙарҙан тулыһынса таҙарынды. Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре өсөн йылға буйлап йөктәр ташыу башланды ла инде.

Төп Төркмәнстан каналын төҙөүселәр йөктәрҙе ҡабул итеүгә яҡшы әҙерләнделәр. Яр буйында тиҙләтелгән темптар менән пристань һалынды, ул бер үк ваҡытта тиҫтәләгән судноларҙы ҡабул итә ала.

Яңы пристань работниктәре Төп Төркмәнстан каналы өсөн йөктәрҙе эшкәртеүҙе тиҙләтелгән ысул менән үткәрергә йөкләмә алдылар.

ЯҢЫ УРЫНДАРҒА

ЖИГУЛЕВСК, (КУЙБЫШЕВ ӨЛКӘҺЕ). Куйбышев гидроэлектростанцияһы төҙөлгән Волга ярында былтыр йорттар тора ине. Хәҙер бында ҡеүәтле экскаваторҙар гидроэлектростанция фундаменте өсөн соҡор ҡаҙыйҙар.

Төҙөлөш эштәре башланған көндән алып яңы урындарға бер йөҙ самаһы йорт күсерелде. Государство күсеп китеүселәргә ҙур аҡса средстволары бирә.

ЯҢЫ ПОСЕЛКАЛАР

ДОНДАҒЫ КАЛАЧ. Йылғасылар — Волга-Дон суднолар йөрөй торған каналды эксплуатациялау работниктәре өсөн 6 поселка төҙөлә. Уларҙың бөтәһе лә канал һәм буласаҡ һыу һаҡлағыстары буйында урынлашҡандар. Яңы ауылдар шоссе юлдары менән бәйләнгәндәр.

Һәр бер поселкала кирбестән эшләнгән икешәр квартиралы 30—40-ар йорт һалынды ла инде.

Каналға яҡын урында төҙөүселәр ҡалаһы төҙөлгән. Бында 200-ҙән артығыраҡ торлаҡ йорто һәм административ бина һалынған.

РЕЗЕРВТАҒЫ ТРУБОПРОВОД

Куйбышев ГЭС-ының төҙөлөш майҙаны. Куйбышев гидроэлектростанцияһын төҙөүселәр айырым объекттарҙы ҡороуға тотолған расходтарҙы кәметәләр. Гидромеханизаторҙар, дюкерҙар һалыуҙа тиҙләтелгән методтарҙы ҡулланып, бер нисә йөҙ мең һум средствоға экономия яһанылар. Шуның иҫәбенә улар Волга аша резервтағы өсөнсө трубопровод үткәрергә ҡарар иттеләр.

Куйбышев өлкәһе. «Куйбышевгидрострой» майҙанына илебеҙҙең төрлө урындарынан көн һайын күп төрлө механизмдар килә.

Һүрәттә: тимер юл рельстәре һалыусы һәм күпер консольный краны төҙөлөшкә илеү юлың һалыу эшендә.

М. Клименков фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Яҙғы сәсеүгә әҙерлеккә етәкселекте көсәйтергә

ВКП(б)-ның Өфө район конференцияһы райкомдың отчет осорондағы эшенә йомғаҡ яһап, өлгәшелгән ҡайһы бер уңыштарҙы билдәләү менән бергә, райком эшендә урын алған серьез етешһеҙлектәрҙе лә асты.

Райком секретаре иптәш Драпеко райондың партия ойошмалары партия-ойоштороу һәм партия-политик эште бер ни тиклем яҡшырттылар, тип күрһәтте. Политик һәм хужалыҡ мәсьәләләрен хәл итеүҙә коммунистарҙың активлеге үҫте һәм уларҙың идея кимәле лә күтәрелде.

Колхоздарҙа сәсеүлек майҙаны байтаҡҡа киңәйҙе, урожайлылыҡ күтәрелде. «Ленинский путь», «Смычка», «Большевик» һәм башҡа колхоздар 1949 йылға сағыштырғанда, гектарынан 7-8 центнерға күберәк урожай алдылар.

Ошо ыңғай күрһәткестәр менән бергә, райкомдың эшендә бик серьез етешһеҙлектәр ҙә бар.

Делегаттар райкомды МТС-тарҙа һәм колхоздарҙа яҙғы сәсеүгә әҙерлек эшен насар ойошторғаны өсөн ҡаты тәнҡитләнеләр. Райком был эшкә МТС һәм колхоз партия ойошмаларының көсөн тулыһынса йүнәлтә алмаған, райондың хеҙмәтсәндәрен яҙғы сәсеүгә тулы әҙерлек менән килеү өсөн көрәшкә туплай алмаған. Ошоға тиклем районда сәсеү орлоҡтары әҙерләү эше тамамланмаған, урындағы ашламаларҙы йыйыу планы тултырылмаған. Ауыл хужалығы инвентарҙарын ремонтлау эше лә һүлпән бара. Булғаҡ һәм Моторный МТС-тары әле булһа тракторҙарҙы ремонтлап бөтмәгәндәр.

МТС-тар һәм колхоздар трактор бригадаларын квалификациялы механизатор кадрҙары менән комплектовать итеү эшен ҡәнәғәтләнерлек ойоштормағандар. Тракторист һәм комбайнер итеп ҡатын-ҡыҙҙар аҙ уҡытыла.

Конференция партия райкомының колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу буйынса партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ күрһәткән ярҙамды тулыһынса файҙаланыуға өлгәшә алмауын билдәләне.

Район колхоздарында үлән баҫыулы сәсеү әйләнеше бик аҡрын үҙләштерелә. Общественный малсылыҡ, бигерәк тә йылҡысылыҡ насар үҫә. Малсылыҡтың продукт биреүсәнлеге һаман да бик түбән. Фуражлыҡ һыйырҙан план буйынса алынырға тейешле булған һөттөң 61 проценты ғына алына.

Партияның район конференцияһы районда ауыл хужалығының былай дөйөм үҫеш темпынан артта ҡалыуы партия райкомының һәм район Советы исполкомының ауыл хужалығын арғабан күтәреү өсөн көрәште ойоштора белмәүҙәрҙән килә, тип билдәләне.

Конференция райкомдан күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙе талап итеп, ҡарар ҡабул итте.

Л. Гыйҙашев,
М. Баранов.

Массовый-политик эшкә күберәк иғтибар

Бөрйән районы партия ойошмаһының конференцияһы райкомдың партия-политик һәм агитацион-массовый эште ойоштороу өлкәһендәге ҙур етешһеҙлектәрҙе асты.

ВКП(б) райкомы һәм партияның тәүге ойошмалары хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эш алып барыуға тейешле иғтибар бирмәйҙәр. «Яңы юл» һәм Киров, Пугачев, Карл Маркс исемендәге колхоздарҙа һайлауҙарҙан һуң агитацион-массовый эш бөтөнләй онотолған. Райкомдың пропаганда һәм агитация бүлеге партия ойошмаларының агитацион-массовый эшенә етәкселек итмәгән. Ул райком инструкторы Юлдурин, Хисматуллин иптәштәр күпселек ваҡыттарын кабинетта ултырып үткәргәндәр.

Пропаганда һәм агитация бүлеге партия мәғарифе секторының эшенә лә конкрет етәкселек итмәй. Бигерәк тә партия тарихын үҙ алдына өйрәнеүселәрҙең эшенә контроль һәм уларға ярҙам насар ойошторолған. Улар өсөн үткәрелергә тейеш булған консультациялар систематик өҙөлә.

Райондың колхоздары өсөн төрлө фәнни һәм политик темаларға лекциялар һәм докладтар үткәреү эше бөтөнләй онотолған. [illegible] ауыл хужалығы специалистары [illegible] район үҙәгендә генә үткәрәләр. [illegible]

[illegible] иғтибар [illegible] партия-политик эште көсәйтеү урынына райком аппараты, район ауыл хужалығы бүлегенең һәм башҡа хужалыҡ ойошмаларының функцияһын үҙ өҫтөнә алған. Хужалыҡ эштәрен политик эш менән бәйләп алып бара белмәгәндәр. Шул арҡала хужалыҡ өлкәһендә лә бик серьез етешһеҙлектәр урын алған.

Районда яҙғы сәсеүгә әҙерлек эше ғәфү ителмәҫлек һүлпән бара. Бер генә колхозда ла ошоға тиклем ауыл хужалығы машиналарын һәм инвентарҙарын ремонтлау эше тамамланмаған. Сәсеү орлоғо туплау планы район буйынса 48 процентҡа ғына үтәлгән.

[illegible]

Конференция асылған етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөүҙе талап иткән ҡарар ҡабул итте.

Райкомдың беренсе пленумы Әбдрахимов, Бикбулатов, Йосопов иптәштәрҙе райком секретарҙары итеп һайланы.

Д. Юлмөхәмәтов.

Ойоштороу һәм политик-тәрбиә эштәрендәге етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөргә

Партияның Ишембай ҡала комитеты пленумы «ҡала партия ойошмаһында ойоштороу-партия һәм политик-тәрбиә эштәренең торошо һәм уларҙы артабан яҡшыртыу саралары тураһында»ғы мәсьәлә буйынса ҡала комитеты секретаре иптәш Яҡиповтың докладын тыңланы.

Докладсы һәм фекер алышыуҙа ҡатнашыусылар ҡала партия ойошмаһында ойоштороу һәм политик-тәрбиә эштәрен яҡшыртыуҙы талап иткән партия директиваларын үтәү буйынса бер ни тиклем эштәр башҡарылыуын билдәләп үттеләр. Шуның менән бергә, пленумда ҡатнашыусылар партия ойошмаларының эшмәкәрлегендә был өлкәлә йәшәп килгән серьез етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡиткә алдылар.

Ҡаланың күп кенә тәүге партия ойошмаларында партия йыйылыштары коммунистик тәрбиә мәктәбе булыу яғынан баһаланып еткерелмәйҙәр. Улар әҙерлекһеҙ үткәреләләр. Шуға күрә унда коммунистар актив ҡатнашмайҙар. Предприятиеларҙың эшен яҡшыртыуға йүнәлдерелгән перспектив мәсьәләләр тикшерелмәй.

Партия ойошмаларының администрация эшмәкәрлегенә контроллек хоҡуғынан етерлек файҙаланмауҙары арҡаһында ҡаланың күп кенә промышленность предприятиелары үҙҙәренең производство пландарын үтәп еткермәйҙәр. Шул иҫәптән, нефть эшкәртеү заводы, машиналар төҙөү заводы, 2-се номерлы нефть промыселы быйылғы йылдың тәүге ике айында планды өҙәләр.

Фекер алышыуҙарҙа 14 кеше сығыш яһаны. Пленум асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә йүнәлдерелгән ҡарар ҡабул итте.

Б. Мөрҙәғәлиев.

ПАРТИЯ ОЙОШМАЛАРЫ СЕКРЕТАРҘАРЫНЫҢ СЕМИНАРЫ

ВКП(б)-ның Ҡандра райкомы колхоз партия ойошмалары секретарҙарының бер көнлөк семинарын үткәрҙе. Семинарҙа ҡатнашыусылар өсөн «Колхоз партия ойошмалары алдындағы яңы бурыстар», «Партгруппаларға партия ойошмаһы нисек етәкселек итергә тейеш», «Яҙғы сәсеүгә әҙерлек һәм уны үткәреү осоронда партия ойошмаһының бурыстары», «Халыҡ-ара хәл» һәм башҡа темаларға лекциялар һәм докладтар ойошторолдо.

П. Еремеев.

АГИТАТОРҘАРҘЫҢ КУСТ КӘҢӘШМӘҺЕ

Кушнаренко районының Талбазы ауылында агитаторҙарҙың куст кәңәшмәһе булып үтте. Унда Ҡараса йылға, Илек, Горький һәм Талбазы ауыл Советтарындағы агитаторҙар ҡатнашты.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар 1950 хужалыҡ йылының йомғаҡтары һәм 1951 хужалыҡ йылын уңышлы үткәреүҙә агитацион-массовый эштең бурыстары тураһында доклад тыңланылар. Докладтан һуң тәжрибә уртаҡлашыу тәртибендә фекер алышыуҙар булды.

Ф. Имаметдинов.

ӘРЕЛӘТЕЛГӘН КОЛХОЗ КОМСОМОЛЕЦТАРЫ

«Ҡыҙыл байраҡ» һәм «Алмалы» колхоздары бер ауыл хужалығы артеленә берләштеләр. Шулай уҡ был ике колхоздың комсомол ойошмалары ла бергә ҡушылдылар. Комитет секретаре итеп, ВКП(б) члелегенә кандидат Шәфҡәт Ғаббасов һайланды. Ул үҙенең эшен ойошманың айлыҡ һәм перспектив эш планын төҙөүҙән, комсомолецтар менән яҡындан танышыуҙан башланы.

Н. Ҡотлоғужин,
ВКП(б)-ның Маҡар райкомы инструкторы.

Һәр бер колхозда яҙғы сәсеү осороңа конкрет эш планы булдырырға

Республикабыҙҙың колхоз, совхоз баҫыуҙарында бер-нисә көндән яҙғы баҫыу эштәре йәйелдереләсәк. Беҙҙең колхоз крәҫтиәндәре һәм механизаторҙар хәҙер бары тик бер генә уй һәм теләк — яҙғы баҫыу эштәренә нисек тә яҡшы әҙерлек менән килеү һәм сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәреп, юғары урожайға нигеҙ һалып ҡалдырыу уйы һәм теләге менән йәшәйҙәр. Яҙғы сәсеүҙе иң яҡшы агротехник сроктарҙа ойошҡан үткәреү өсөн колхозсылар, механизаторҙар араһында социалистик ярыш киңдән-киң киңерәк ҡолас ала бара.

Республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдында урожайҙы күтәреү, общественный малсылыҡты үҫтереү буйынса быйыл бик серьез бурыстар тора. Был бурысты үтәү өсөн колхоздарҙа бөтә мөмкинлектәр бар. Колхоздарҙа күптән түгел булып үткән отчет-һайлау йыйылыштары ауыл хужалығы артелдәрендә файҙаланылмай ятҡан бик күп резервтарҙың булыуын асты. Был әҫке резервтарҙы хәрәкәткә килтереү, МТС һәм колхоздарҙың бөтә материаль-техник һәм хеҙмәт ресурстарын тулыһынса һәм дөрөҫ файҙаланыу, һәр бер трактористың һәм һәр бер колхозсының смена һәм көндәлек эш нормаһын арттырып үтәүенә өлгәшеү яҙғы сәсеү планының уңышлы үтәлеүен хәл итәсәк.

Быға өлгәшеү өсөн баҫыу эштәренең дөрөҫ һәм аныҡ план нигеҙендә ойошторолоуы талап ителә. Колхоздарҙың һәм машина-трактор станцияларының бай тәжрибәләре яҙғы сәсеү осороңа төҙөлгән эш пландарының колхоздарҙа, трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларында булған бөтә көстө һәм средстволарҙы дөрөҫ файҙаланыуға, бөтә төр баҫыу эштәрен бергә дөрөҫ бәйләп алып барыуға һәм уны ваҡытында башҡарып сығыуға ҙур ярҙам иткәнен күрһәтте. Яҙғы сәсеү осороңа төҙөлгән эш пландары шулай уҡ МТС-тарҙың машина-трактор паркын, колхоздарҙағы эшсе һәм йәнле тартыу көстәрен рациональ файҙаланыуға, эш сәғәттәрен тығыҙлауға мөмкинлек бирә.

Ташлы МТС-ында иптәш Мөхәмәтов етәкселек иткән трактор бригадаһы үҙған йыл «Шат» колхозын хеҙмәтләндерҙе. Был трактор бригадаһы яҙғы баҫыу эштәрен бары тик аныҡ төҙөлгән эш планы нигеҙендә генә алып барҙы. Был планда һәр бер йәки был төр баҫыу эштәренең ҡайҙа һәм ниндәй сроктарҙа үтәлергә тейешлеге күрһәтелгәйне. Шулай уҡ план был трактор бригадаһы хеҙмәтләндергән иптәш Хамматов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһында ла булды. Трактор бригадаһы менән баҫыусылыҡ бригадаһы был планды үтәү өсөн берҙәм, нығыу көрәш алып барҙылар. Бына шул арҡала был бригадалар яҙғы баҫыу эштәрен 6 көн эсендә яҡшы сифатлы итеп үтәп сығыуға өлгәштеләр.

Ләкин күпселек райондарҙа баҫыу эштәре осороңа план төҙөүгә тейешле иғтибар бирелмәй, был мөһим эште йыл һайын өҙөп килгәләр. Быны тик урындағы партия, совет органдарының һәм колхоз, МТС етәкселәренең был эште баһалап еткермәүҙәре менән генә аңлатырға була. Үҙған йыл Ҡырмыҫҡалы, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Илешбай райондарының колхоздары яҙғы баҫыу эштәрен планһыҙ алып барҙылар һәм был хәл баҫыу эштәрен бик оҙаҡҡа һуҙыуға килтерҙе. Быйыл да быға тейешле иғтибар бирелеп еткерелмәй. Әбйәлил һәм Воскресен райондарында бик күп колхоздар хатта ошо көнгә тиклем яҙғы баҫыу эштәре осоро өсөн эш планы төҙөүгә лә башламағандар.

Район Советы исполкомдары һәм ВКП(б) райкомдары, шулай уҡ колхоз һәм МТС етәкселәре ауыл хужалығы эштәрен планлаштырыуҙағы был серьез етешһеҙлектәрҙе тиҙ көндәрҙә бөтөрөү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр. Колхоздарға йыллыҡ производство пландарын, бригадаларға һәм звеноларға производство заданиеларын, яҙғы баҫыу эштәре осороңа эш пландарын төҙөүҙе тиҙерәк тамамлауға колхоз правлениеларына практик ярҙам күрһәтергә кәрәк.

Яҙғы баҫыу эштәре осоронда эштә айырыуса юғары ойошҡанлыҡ талап ителә. Шуға күрә һәр бер колхоздың, баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаһының алдан ныҡлап уйланған аныҡ эш планы булыуы шарт. Колхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадаһының эш планында урожайҙы күтәреүгә ярҙам итеүсе алдынғы агротехник приемдарҙы ҡулланыуҙа ҡарата ҡарағы агротехник саралар һәм эш ҡоралдарын файҙаланыу буйынса йыллыҡ производство заданиелары аныҡланырға тейеш. Колхоздың баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының эш пландары бөтә колхозсыларҙы һәм механизаторҙарҙы яҙғы баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа сроктарҙа һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә, МТС-тарҙың бай техникаһын, шулай уҡ колхоздың үҙенең эшсе көстәрен һәм эш ҡоралдарын тулы һәм дөрөҫ файҙаланыуға йүнәлдерергә тейеш. Баҫыусылыҡ бригадаларының эшен трактор бригадаларының эше менән тығыҙ бәйләп алып барғанда ғына яҙғы баҫыу эштәрен өлгөлө үткәрергә мөмкин.

Бөтә яҙғы баҫыу эштәрен, атап әйткәндә, ужымдарҙы өҫтәмә ашыҡландырыу, уларҙы тырматыу, туңға һөрөлгән ерҙәрҙе дым һаҡлап ҡалыу, һөрөү ҡатламын тәрәнәйтеү, бөртөклө ашлыҡ культураларын аркыры-буй һәм тар рәтле итеп сәсеү, баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын ултыртыу һәм урожайҙы күтәреүгә йүнәлдерелгән башҡа шундай мөһим сараларҙы эш планында күрһәтелгән сроктарҙа яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн һәр бер колхоздың, МТС-тың, шулай уҡ трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаһының сәсеүгә өлгөлө әҙерлек менән килеүе бик мөһим. Ләкин яҙғы баҫыу эштәре башланырға бары тик бер нисә генә көн ҡалыуға ҡарамаҫтан, күпселек МТС һәм колхоздарҙа әле булһа әҙерлек эштәре тамамланмаған. Бурыс — тракторҙарҙы һәм тағылма инвентарҙарҙы ремонтлауҙы тиҙерәк тамамлауҙан, трактор бригадаларын трактористар, прицепщиктар һәм башҡа работниктар менән үҙ ваҡытында комплектовать итеүҙән тора. Һәр трактор бригадаларында ла эш планынан тыш, машиналарҙы дөрөҫ хәрәкәт иттереү маҡсатында аныҡ маршруттар төҙөлергә тейеш. Трактор һәм шулай уҡ баҫыусылыҡ бригадаларының эш планында трактористарҙың һәм колхозсыларҙың смена һәм көндәлек эш нормаларын үтәүҙәренә һәм арттырып үтәүҙәренә һәм сәғәт графигын ныҡлы һаҡлауға серьез иғтибар бирергә кәрәк. Ә был беренсе нәүбәттә колхоздарҙың трактор бригадаларын яҡшы хеҙмәтләндереүҙәренә бәйләнгән. Шуның өсөн дә эш планында ер участкаларын әҙерләү, ягыулыҡ, һыу һәм орлоҡ ташыу, сәскестәргә орлоҡ һалыу, баҫыуҙа дөйөм туҡланыу ойоштороу мәсьәләләре конкрет билдәләнергә тейеш.

Механизацияның әленән-әле үҫә барыуы һәм ваҡ колхоздарҙы эреләтеү шарттарында ауыл хужалығы эштәрен дөрөҫ планлаштырыу ҙур әһәмиәткә эйә. Партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары был эштә колхоздарға эшлекле ярҙам күрһәтергә тейештәр. Һәр бер колхозда яҙғы сәсеү осоро өсөн эш планын төҙөүҙе һис кисекмәҫтән тамамлауға өлгәшергә кәрәк. Бурыс — ауыл хужалығы эштәрен планлаштырыуҙың кимәлен юғары күтәреүҙән, уларҙы әҫке резервтарҙы файҙаланыуҙа, колхозсылар массаһын яҙғы сәсеү эштәрен ойошҡан үткәреүгә, тотороҡло һәм юғары урожай алыуға мобилизовать итеүҙә колхоздарҙың һәм МТС-тарҙың көслө ҡоралына әйләндереүҙән тора.

Ә. Әхмәтов,
Башҡорт Ауыл хужалығы министерствоһының ойоштороу-колхоз бүлеге начальнигы.

Оборудованиеларҙың файҙаланылыуын тикшерәбеҙ

БӨТӘ МЕХАНИЗАЦИЯНЫ — ТӨҘӨЛӨШ ЛИНИЯҺЫНА

«Башпромстрой» тресының Ишембайҙағы 3-сө номерлы төҙөлөш управлениеһе алдынғы техника менән ҡоралландырылған. Унда производство планын үтәү өсөн етерлек һанда бөтә төр төҙөү машиналары, йөк ташыу өсөн яңы автомашиналар һәм тракторҙар бар. Эшсе көсө менән дә тулыһынса комплектовать ителгән. Төҙөлөш материалдары менән тәьмин итеүҙә лә өҙәклектәр булғаны юҡ.

Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, 3-сө номерлы төҙөлөш управлениеһе 1950 йылда торлаҡтар төҙөү планын үтәмәне. Шуның менән бергә, ул государствоға 656 мең һумлыҡ зыян килтерҙе. Ағымдағы йылда ла ул ғәфү итмәҫлек насар эшләүендә дауам итә. Ғинуар һәм февраль айы пландары үтәлешә 60 процент ҡына тәшкил итте.

План үтәлешенең өҙөлөүе, бөтәһенән элек, бай техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланмауҙан һәм ҡиммәтле оборудованиеларға насар ҡарауҙан килеп сыға. Уны иҫбат итеү өсөн төҙөлөш участкаларындағы эштең торошон күрһәтеү генә лә етә. Миҫал өсөн иптәш Овсянников етәкселек иткән участканы алайыҡ. Ул тәртипһеҙ рәүештә ташланған төҙөлөш материалдары менән тулған.

— Нормала күрһәтелгәненсә, — ти ташсы иптәш Трапезников, — һәр бер ташсыға бер ярҙамсы эшсе булырға тейеш. Ә беҙҙә бер ташсыны материалдар менән тәьмин итеү өсөн 4-5 кеше эшләй.

Эшселәр бик ҙур ауырлыктағы шлакоблоктарҙы юғарыға носилкаға һалып ташыйҙар. Ә управлениела йөктө күтәреү өсөн хеҙмәт итеүсе механизмдарҙан транспортерҙар, «Пионер», «Укосин» крандары етерлек. Икенсе номерлы участкала яңы транспортер ҡар аҫтында тутығып ята. Был ғына ла түгел, унда тағы ла бер нисә электромотор, ҡом иләүгес, бетон һәм балсыҡ иҙелмәләре бутаусы машиналар ҙа ҡар аҫтында «һаҡлана».

Стенаһы һалынып бөткән йорттоң эсендә уңлап ҡыҙ йырлашып ултыра.

— Беҙ, штукатурсылар, тиҙәр улар,— ләкин эшләргә һалҡын. Ике ай инде ваҡ-төйәк эштә генә йөрөйбеҙ.

Ысынлап ҡарағанда, бында штукатурсыларға эш етерлек. Икешәр ҡатлы дүрт йорт штукатурланмайынса ултыра. Ошо уҡ участкала эшләүсе күренекле штукатурсы иптәш Шекочихин 20-25 градуслы ҡышҡы һалҡындарҙа ла штукатура эштәрен башҡарыу мөмкинлеген, үҙенең практик эше менән иҫбат иткәйне. Ләкин төҙөү эштәрен тик йылы сезонда ғына алып барырға иҫәп тотҡан управление начальнигы Ефремов һәм баш инженеры Киселев иптәштәр был ҡиммәтле инициативаны күтәреп алманылар. Штукатурсыларға ҡыш көнө лә эшләү өсөн хәстәрлек күрмәнеләр. Һөҙөмтәлә хәҙер уңарлаған штукатурсылар эшһеҙ ултыралар. Дүрт штукатурлау машинаһының береһе лә файҙаланылмай.

Управлениеның ҡеүәтле автопаркы бар. Үткән йылда заводтан яңы автомашиналар алынды. Ләкин улар тулы ҡеүәтендә файҙаланылмайҙар. Автопарктың 50—60 проценты ғына рейска сыға. Тейәү һәм бушатыу эштәрендә даими бригадалар булмау, механизация көстәре ҡулланылмау сәбәпле был машиналар ҙа күп ваҡыт буш торалар. Уларға тейешле ауырлыкта йөк тейәлмәй. Йәйге төҙөлөш сезоны өсөн 20 километр алыҫлыҡтан 4 ярым мең кубометр таш сығарырға, бик күп ҡом һәм шлак ташырға кәрәк. Хеҙмәтте дөрөҫ ойошторғанда, бөтә автомашиналарҙы ла был эштә тулыһынса файҙаланырға мөмкин.

Стена һалыу өсөн шлакоблоктар управлениеның үҙендә етештерелә. Бындағы «ЯК—2» маркалы шлакоблок установкаһы сменаға 5-6 сәғәт кенә эшләтелә. Ул сәғәтенә 150 блок бирә ала, ә ул тик 40-50 блок ҡына етештерә. Прораб иптәш Филиппев, шлакты йылытыу өсөн күп ваҡыт талап ителә, тип зарлана. Ә шлакты пар көсө менән йылытыу өсөн махсус ҡуйылған ҡаҙан файҙаланылмай.

Управление етәкселәре, ҡыш көнө төҙөлөш эштәре ҡәмегәс, күпме блок етештерелһә, беҙгә шул етә, тип үҙҙәрен ҡәнәғәтләндергәндәр. Йәйге сезон ваҡытында был установка ғына эшләп сығарған блок етмәйәсәк. Үткән йылдың апрель айында уҡ шлакоблок етештереүсе ҡеүәтле автоматик станок алынғайны. Был станок ошо көнгә тиклем эксплуатацияланмай. Уны эксплуатациялау тураһында артыҡ хәстәрлек тә юҡ. Автоматик станок менән бергә алынған электр көсө менән ағас киҫтереү машинаһы ла складта тутығып ултыра.

Управлениела оборудованиеларға ҡарата хужаһыҙлыҡ, сиктән тыш насар мөнәсәбәт йәшәй. Оборудованиелар бер кемгә лә беркетелмәгәндәр, улар ҡайҙа тура килә шунда ташланғандар. Уларҙың торошо, ремонтлау һәм төҙәкләндереү өсөн бер кеше лә үҙен яуаплы һанамай. Һөҙөмтәлә, ер-яңы механизмдар бер нисә айҙан һуң сафтан сығалар. Быға миҫал итеп, яңы автоэкскаваторҙың бер аҙ ғына эшләгәндән һуң боҙолоуын алырға мөмкин.

Техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу төҙөүселәрҙең оҫталығы менән бәйләнгән. Төҙөүселәр өсөн ҡышҡы һәм яҙғы сезон — кадрҙар әҙерләү, эшселәрҙең эш квалификацияларын күтәреү буйынса уҡыуҙар ойоштороуҙа иң уңайлы ваҡыт. Был эшкә лә управление етәкселәре яуаплыһыҙ ҡарайҙар. Бөтә управление буйынса техник уҡыуҙарҙың бер генә төрө лә ойошторолмаған. Шуңлыҡтан да үткән йылда тик алты ғына рационализаторлыҡ тәҡдим индерелеүе, ә 1951 йылдың 2 айында бер генә тәҡдим дә индерелмәүе ғәжәп түгел.

Киң йәйелдерелгән социалистик ярыш нигеҙендә тыуған алдынғы эш методтарын ҡулланып эшләү хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә төп роль уйнағанлығы һәр кемгә билдәле. Быны 3-сө номерлы төҙөлөш управлениеһе етәкселәре аңлап етмәйҙәр. Был өлкәлә улар яуаплыһыҙлыҡ күрһәтәләр. Кафаров, Сычев, Ковалев иптәштәрҙең эш методтары тураһында эшселәр белмәйҙәр ҙә. Прораб участкалары хужалыҡ иҫәбенә күсерелмәгәндәр. Материалдарҙы тотоноуҙа иҫәп алып барылмай, экономия яһау өсөн көрәш ойошторолмаған.

Профсоюз комитеты (председателе иптәш Черниган) эшселәрҙең дөйөм йыйылыштарын, производство кәңәшмәләрен үҙғарыу эше менән ҡәнәғәтләнерлек етәкселек итмәй. Шуңлыҡтан дөйөм йыйылыштар бик һирәк үҙғарыла. Эшселәргә управление етәкселәре алдында үҙҙәренең талаптарын әйтергә, яраҡһыҙ эш етиндәрен тәнҡитләргә мөмкинлек юҡ.

3-сө номерлы төҙөлөш управлениеһе етәкселәре, бөтә бай техниканы төҙөү линияһына сығарып, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу юлы менән уларҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланып, государство планын арттырып үтәргә бурыслылар. Был бурысты уңышлы үтәп сығыу өсөн уларҙың бөтә мөмкинлектәре бар.

Рейдта ҡатнаштылар:
Т. Миңнебаев,
нефтселәр союзының ҡала комитеты инструкторы,
А. Илясеев,
ҡала коммуналь хужалығының баш инженеры вазифаһын үтәүсе,
Б. Мөрҙәғәлиев,
«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының үҙ хәбәрсеһе.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ[illegible]

Совет сауҙаһы принцип[illegible] боҙоуға юл ҡуйыл[illegible]

Ғафури районы Ерек сельпо[illegible] газинына ос ауылдың пайщик[illegible] мәтләндереү бурысы йөкмәтелгә[illegible] был магазиндең һатыусыһы ипт[illegible] мова культуралы сауҙа итеү [illegible] үҙ өҫтөнә йөкмәтелгән бурысты [illegible] алыҫ тора. Бында магазин [illegible] үҙ ваҡытында асылмай. Шуңл[illegible] уар алырға килеүсе пайщиктар [illegible] Хәкимованы эҙләп, уның квар[illegible] барырға мәжбүр булалар.

Шуның өҫтәүенә бында совет [illegible] принциптарын тупаҫ боҙоуға [illegible] ған. Иптәш Хәкимова пайщик[illegible] килгән иң яҡшы тауарҙарҙы [illegible] йәшерен рәүештә үҙенең яҡын [illegible] ләренә һәм таныш-белештәренә [illegible] ҫәлә, ул ауылдашы Лотфулла [illegible] шегә йәшерен генә бер нисә [illegible] шәкәр биреп ебәрә. Шулай уҡ [illegible] килгән аҡ он һәм башҡа төрлө [illegible] ҙың да тик яҡын кешеләренә [illegible] фактары бар.

Унан һуң иптәш Хәкимова, [illegible] гән ҡатынға галошты билдәләнгә[illegible] нан бер һумға арттырып һатты. [illegible] ул һатып алыусыларға тауарҙы [illegible] бирә һәм артыҡ түләнгән 10-15 [illegible] саны бер ваҡытта ла ҡайтармай. Үҙенә файҙа килтереү маҡсатын[illegible] зинга килгән тауарҙы көтөргә [illegible] роуҙы ҡуллана.

Совет сауҙаһы принциптарын [illegible] боҙоусы Хәкимоваға ҡарата тейеш[illegible] ғандар сара күрерҙәр тип ышана[illegible]

Т. Хә[illegible]

Клуб эшенә иғтибар бирелмәй

Кушнаренко районы Салауат [illegible] гә колхоздың ҙур һәм уңайлы клуб[illegible] Ләкин колхоз правлениеһының [illegible] ағартыу эшенә әһәмиәт бирмәү[illegible] һында, клуб бинаһы ҡыш буйы [illegible] келәте итеп файҙаланылды. Унан [illegible] һе һүтеп яғылды. Мейес һәм т[illegible] ватыҡ, килеүселәргә ултырыу өсөн [illegible] дар әҙерләнмәгән.

Колхозда 50-гә яҡын комсомол[illegible] Ләкин клуб бинаһының ошондай [illegible] һеҙ хәлдә булыуы комсомолец[illegible] союздан тыш йәштәр араһында культ[illegible] массовый эштәр алып барыуға, тә[illegible] эштәрҙе йәйелдереүгә ҙур тотҡарлыҡ [illegible]

Бындағы комсомол ойошмаһы [illegible] ремонтлау тураһында колхоз пред[illegible] иптәш Шәриповҡа бер нисә тапҡыр [illegible] рәжәғәт итһә лә, тейешле һөҙөмтә[illegible] шә алманы. Район Советы исполком[illegible] культура-ағартыу бүлеге лә Салау[illegible] мендәге колхозда культура-ағартыу [illegible] рен юлға һалыуға иғтибар итмәй.

Беҙ тиҙ көндә был етешһеҙлектәр[illegible] бөтөрөлөүен талап итәбеҙ.

З. [illegible]
комсомолдың тәүге ойошма[illegible] секретаре.

Аҙау ауыл клубының эш[illegible] яҡшыртылһын

Ауыл клубы — ауылда культура [illegible] гә булып һанала. Ләкин Архангель[illegible] йонының ҡайһы бер ауыл Советт[illegible] был эшкә тейешле әһәмиәт бирелм[illegible]

Бына Аҙау ауылы клубын алайыҡ. [illegible] әлегә тиклем йәштәрҙе политик тәрбиә[illegible] өлкәһендә үҙенә йөкмәтелгән бурыс[illegible] үтәй алмай. Клубҡа ремонт үткәре[illegible] үҙ ваҡытында йылытылмай. Бина[illegible] ҡын булғанлыҡтан, йәштәр клубҡа [illegible] майҙар. Шуның һөҙөмтәһендә бында [illegible] әйләнеһе буйынса күҙгә күренерлек [illegible] төрлө лә планлы эш алып барылмай.

Клубта бер генә лозунг, плакат та [illegible] Партия һәм хөкүмәт етәкселәренең [illegible] треттары ҡуйылмаған. Уның мөдире [illegible] тәп Сөләйманов эште яҡшыртыу [illegible] һында бер төрлө лә хәстәрлек күр[illegible] район Советы исполкомының культ[illegible] ағартыу учреждениелары бүлеге клуб [illegible] эше менән ҡыҙыҡһынмай, халыҡ ара[illegible] культура-ағартыу һәм политик-т[illegible] эштәрен яҡшыртыу буйынса практик [illegible] саралар күрмәй.

Аҙау ауыл клубының эшен яҡшырт[illegible] ға бик ваҡыт инде.

Н. Ғизз[illegible]

„Ҡыҙыл Башҡортостан“ материалдары эҙенән

„Ново-Александровкала агит-массовый эш ойошторолмай“

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Баш[illegible] тостан» газетаһының 25-се номер[illegible] Черниковск ҡалаһының Ново-Алекс[illegible] дровка поселкаһында йәшәүсе эшсе[illegible] һәм хеҙмәткәрҙәр араһында агит-ма[illegible] вый эштең насар ҡуйылыуы тураһ[illegible] хәбәр баҫылғайны. Был хәбәр ба[illegible] сығыу айҡанлы ВКП(б)-ның Черни[illegible] ҡала комитеты редакцияға түбә[illegible] яуапты бирҙе:

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газета[illegible] баҫылған был хәбәр төҙөлөш-монтаж [illegible] лениеһе эргәһендәге партбюро у[illegible] шында тикшерелеп, эште яҡшырт[illegible] йынса күп кенә практик саралар [illegible] ләнде. Һуңғы көндәрҙә Ново-Алекс[illegible] ка поселкаһында стационар [illegible] новка булдырылды. «Новатор» [illegible] янында художестволы үҙешмәкәр[illegible] нәрәк ойошторолдо. Бындағы эшсе[illegible] һында даими агит-массовый эш алып [illegible] өсөн агитаторҙар бүленде. Хәҙер [illegible] планлы эш алып баралар».

Драматург-композитор Хәбибулла Ибраһимов ижады

Рәхмәт сәләме

Дес ялаһында кеҙгә ҡараңғы һәм тынып бер төн. Фронт һыҙығының тәрән ...һында, әле япраҡтарын ҡойорға өлгәр... ...алмалыҡ һәм сейәлектәр араһында ...ятҡан станица тәрән тынлыҡ ...сумған. Станицаның тәҙрәләре ...ланған бер өйөнән гармон тауышы... ...ҡушылып, йөрәктәрҙе елкендереп һәм ...экта, әлегә тиклем ишетелмәгән яңы ...бер йыр яңғырай.

Советтар ере — Тыуған илебеҙ,
Бөйөк Сталиндең һөйгән улы беҙ,

Шул исем биргән ғәйрәт һәм нурҙан
Ялтыра беҙҙең ҡорал юлыбыҙ.

Батыр күңелде,
Гүзәл ғүмерҙе
Шул илгә биреү
Бәхет түгелме!

Ватан хаҡына, ата хаҡына
Бирербеҙ һыуға, янған уттарға.
Тыуған еркәйҙе, гүзәл илкәйҙе
Мәңге бирмәбеҙ фашист дошманға!

...һүҙҙәр, бик асыҡ булып, өй тыны...ғы кешеләргә лә ишетеләләр.

Был өй — башҡорт һыбайлылары дивизияһының командиры генерал-майор Шайморатовтың поход штабтарында, көн ...ы алмашынып тора торған квартираларының береһе ине. Бында бөгөн генерал-майор Башҡортостан халҡынан дивизияның воиндарына сәләм, боевой наказ һәм бүләк килтергән делегация менән осрашыу кисәһе ойоштороғайны.

Тәрән уйға батып тыңлап ултырыусы генерал-майорҙың йөҙөнә, йыр тамам булыу менән, ҡәнәғәтләнеү билдәләре ...ып сыҡтылар. Ул киңәт рухланып китте һәм бик ялҡынлы итеп алҡышлы тауыш менән:

— Ҡабатлағыҙ әле, әшәһе! — тине. Йыр тағы ла ҡабатланды. Шунан һуң ул бик ихлас алҡышланы, Өфөнән килеүселәрҙең бәтәһенә лә төбәлеп һәм мөрәжәғәт итеп:

— Был кемдең музыкаһы? — тип һораны. Генерал менән йәнәшәлә ултырыусы, республиканың халыҡ артисткаһы Бәдәр ханым Йосопова:

— Был көй, башҡорт композиторы Хәбибулла Ибраһимовтың Бөйөк Ватан һуғышы көндәрендә яҙған көйҙәренең береһе, — тине.

Генерал Шайморатов дивизия политбүлегенең эшендә ултырған работниктәренә, был көйҙө, иртәгәнән ҡалдырмайынса ҡурайсыларҙың өйрәнеп ҡалыуҙарына өйрәнергә ҡушты һәм һүҙенең аҙағында:

— Бик яҡшы, был әҫәр воиндарҙы батырлыҡҡа рухландыра торған һәм беҙгә бик кәрәк булған бер көй. Был композиторға беҙҙән боевой рәхмәт сәләме тапшырығыҙ! — тине.

Икенсе көндә беҙ таңға ҡалдыҡ. Улар, ҡасан һәм нисек итеп былай тиҙ үҙләштергәндәрҙер, Сарбаҙтар, был көйҙө беҙҙең яныбыҙға ҡуш ҡурай менән уйнап килеп керҙеләр.

Генерал-майорҙың бөтә дивизия исеменән әйткән был боевой сәләме композиторҙы яңы ижади эштәргә рухландырҙы. Бынан һуң ул үҙенең «Фронтҡа киткәндә», «Ҡайтырма сибәрем» исемле матур көйҙәрен ижад итте. Украина композиторы Ф. Е. Козицкий менән берлектә «Ватан өсөн» тигән бер актлы опера барлыҡҡа килтерҙеләр.

Был әҫәрҙәр, композиторҙың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ижад иткән музыкаль әҫәрҙәре араһында иң күренекле урынды тоталар һәм киләсәктә лә тотасаҡтар.

Сәйфи Ҡудаш.

Бер ролдә егерме ете йыл

Мин Х. Ибраһимовтың «Башмағым» тигән әҫәрендә Кәрим бай ролен 1924 йылдан бирле уйнап киләм. Өфө тамашасылары ғына түгел, Уралдың күп кенә ҡалаларында — Челябе, Троицк, Магнитогорск, Омск шулай уҡ башҡа күп кенә ҡалаларҙа Кәрим бай образында халыҡ алдына сыҡтым. Шулай уҡ Башҡортостандың күп кенә районларында ла уйнаным. Ҡалалмы, райондамы — ҡайҙа ғына булмаһын, һәр ерҙә был әҫәрҙе тамашасылар яратып ҡат-ҡат һорайҙар.

Кәрим бай роле миңә тормошта таныш булһа ла, мин ул образды тиҙ генә эшләп *өлгөрә алманым*, һәм мин уны һаман да камиллаштереү өҫтөндә эшләйем. Буржуаз обществола һәр бер Кәрим байҙар икеле булдылар. Улар бергә йыйылышып һөйләшкәндә һәр ваҡытта бер-береһенә яҡшы кешеләр булып күренергә тырышалар. Ә инде бер-береһенән айырылдымы хәйләлек, алдаҡсылыҡ менән эш итергә тотона. Шул уҡ үҙе алдында маҡтап һөйләгән кешеләрен күрә алмай, уның үҫеүенә әҙер тора: уңа үҙен өсөн генә йәшәү, үҙең тураһында ғына хәстәрлек итеү характерле. Мәҫәлән, Йыһан ҡарсыҡ кинәт тә булһа ҡыҙын приказчик Хәлил менән ҡауыштырыу өсөн бер нимәй ҙә ысраҡлыҡтарҙан ҡурҡмай, ләкин, Кәрим бай бисәһе нисек булһа ла ирен үҙенә ныҡыраҡ ҡаратыу тураһында баш вата. Ә Кәрим бай башҡа нәмә тураһында уйлай, янғыҙ ҡалғас телеграмма яҙа: «Нижгородская ярмарка Волга Маруська Петровна Благополучено пришел, без тебя скучно, скоро Мәскәүгә пойдем там увидемся».

Әҫәр буржуа тормошоноң һәр яғын, уның серен тарҡала барыуын, сауҙагәрҙәрҙең, кешеләргә, донъяға барыһы тик аҡса, мал күҙлегенән генә сығып ҡарауҙарын, улар семьяһының бары тик аҡса мөнәсәбәттәренә генә ҡарата ҡоролоуын күрһәтә.

Х. Ибраһимовтың үткер юмористик теле образдарҙы, ваҡиғаларҙы уңышлы күрһәтергә ярҙам итә. Мин был Кәрим бай ролен 27 йыл буйы сәхнәлә уйнаным һәм һаман да яратып уйнайым.

Кешенең рухани тормошон художестволы сағылдырыу — театр искусствоһының төп маҡсаты. Быны өсөн беҙгә, актерҙарға, үтә яҡшы техника кәрәк. Театр искусствоһы тәбиғәттең органик закондары нигеҙенә ҡоролған, һәр бер спектаклдә ролде башҡарғанда уның менән бергә йәшәргә кәрәк. Константин Сергеевич Станиславский актерҙың үҙ өҫтөндә һәм роль өҫтөндә бер туҡтауһыҙ эшләргә тейеш булыуын күрһәтте. Актер алдында үҙ-үҙенде контролләү бурысы ҡуйылған һәм ул актерҙан постелгә ятҡанда йәки унан торғанда, йөрөгән ваҡытта, ял ваҡытында, эш ваҡытында өҙлөкһөҙ юнәлештәрҙе эшләүҙе талап итә.

Ғ. Минһажев,
РСФСР-зың халыҡ артисы.

Хәбибулла Ибраһимов — башҡорт искусствоһын алға ебәреүҙә ҙур хеҙмәттәр күрһәтте. Ул башҡорт театрын ойоштороуҙа һәм театраль кадрҙар әҙерләүҙә актив ҡатнашыусыларҙың береһе булып иҫәпләнә. Уның драматург-композитор сифатындағы ижад юлы «Башмағым» кеүек оҙон ғүмерле комедия һәм халыҡҡа яҡын булған башҡа бик күп драматик һәм музыкаль әҫәрҙәр менән биҙәлгән.

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының бөгөнгө номерендә драматург-композитор Хәбибулла Ибраһимовтың ижады тураһында әҙәбиәт, искусство работниктәренән һәм газета уҡыусыларҙан редакцияға килгән хаттарҙы урынлаштырҙыҡ.

Башҡорт совет искусствоһының пионеры

Драматург һәм композитор Хәбибулла Ибраһимов башҡорт драматургияһы һәм профессиональ музыканың үҫешендә бик әһәмиәтле һәм үҙенсә тарихи урынын тота.

«Башмағым» пьесаһы тәрән реалистик эстәлеккә эйә булыуы арҡаһында, башҡорт, татар халҡы араһында бик популяр әҫәр һәм беренсе музыкаль комедия өлгөһө.

Граждандар һуғышы йылдарында яңы ғына формалашып килгән Совет Башҡортостанының йәш профессиональ искусствоһында Х. Ибраһимов тәүге пионер һәм ойоштороусы булды. Беренсе профессиональ композитор Х. Ибраһимовтың башҡорт халҡының геройына арнап яҙылған «Салауат маршы», Башҡортостандың ирекле ҡатын-ҡыҙҙарына арналған «Уражсы ҡыҙ», «Башҡорт маршы», тигән көйҙәре хеҙмәтсәндәребеҙ араһында популярлаштылар һәм халыҡ көйҙәренә әйләнделәр. Был йырҙар үҙ ваҡытында, әле яңы ғына социализм төҙөү юлына баҫҡан башҡорт халҡын героик хеҙмәткә өндәнеләр, еңеүҙәргә рухландырҙылар.

Х. Ибраһимов — йыр һәм драма ижады менән илебеҙҙә социализм төҙөүҙә актив ҡатнашыусы композитор. Быны уның «Кесә йәштәр», «Прогул бөтһөн», «Бесәнселәр», «Байраҡтар йыры», «Машиналар йыры», «Комсомол, алға», Ватан һуғышы осоронда Сәйфи Ҡудаш һүҙҙәренә яҙған «Илде бирмәбеҙ», «Ҡайтырма, сибәрем» һәм һуңғы йылдарҙа ижад иткән «Зәйтүнә», «Колхозсылар» тигән йырҙары раҫлайҙар.

Башҡортостандың иң ҡарт композиторҙарынан береһе һәм музыка искусствоһының иң беренсе пионеры Хәбибулла Ибраһимовҡа башҡорт композиторҙары бөтә йөрәктән сәләмәтлек менән бергә тағы ла ҙур ижади уңыштар теләйҙәр.

Х. Әхмәтов,
Башҡорт Совет композиторҙары союзы председателе.

Хәбибулла Ибраһимовтың Башҡорт государство Академия драма театрында ҡуйылған «Башмағым» тигән музыкаль комедияһынан бер күренеш. Һүрәттә (һулдан уңға): Сәүәр ролендә— артистка Р. Янбулатова, ҡыҙҙар ролдәрендә — Ғ. Исмәғилова, Х. Пәйүзина һәм П. Пестова, Кәрим бай ролендә — РСФСР-ҙың халыҡ артисы Ғ. Минһажев, Сәрби — Һ. Бәширова, аҫрау ҡыҙ — Д. Дауытова.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

ЯҢЫ УҢЫШТАР ТЕЛӘЙБЕҘ

Хәбибулла Ибраһимов — ул искусство кешеһе. Ә искусство, беҙҙә хеҙмәтсәндәрҙең тормош яҙы булған коммунизм обществоһы төҙөү бурыстарын үтәүҙә ғәйәт ҙур роль уйнай.

Үҙенең драма һәм музыкаль әҫәрҙәре менән тамашасылар араһында ҙур ихтирам ҡаҙанған Х. Ибраһимовтың ижад юлы һәр ваҡытта ла Совет власенең дәүми хәстәрлеге менән солғап алынған булды. Нәтиҗә Ибраһимовтың ижади уңыштары — улар формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик башҡорт культураһы уңыштарының бер өлөшө. Ул үткән 30 йыл ваҡыт эсендә республика театрҙары сәхнәләрендә капитализм ҡоролошон һәм һуңынан уның ҡалдыҡтарын тәрән фашлаусы театр әҫәрҙәре тыуҙырҙы. Был әҫәрҙәр араһында дөйөм билдәле булған «Башмағым» комедияһы бер ростан бюрократизмға ҡаршы көрәш тураһында яҙылған «Ямиле менән Камале», ауыл хужалығын коллективлаштереү осоронда яҙылған «Уражсы ҡыҙ», «Һыу йыры», «Зәйтүнә», «Комсомол, алға», «Машиналар йыры» Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яҙылған «Илде бирмәбеҙ», «Фронтҡа киткәндә», «Ҡайтырма, сибәрем», «Башҡорт маршы» кеүек күренекле әҫәрҙәр бар.

Композитор һәм драматург иптәш Ибраһимовҡа башҡорт искусствоһын артабан үҫтереүҙә яңы уңыштар теләйбеҙ.

Әмин Зөбәиров,
РСФСР-ҙың халыҡ артисы.

Иҫке тормошҡа әсе сатира

Талантлы драматург һәм композитор Хәбибулла Ибраһимовтың «Башмағым» тигән музыкаль комедияһының тәү тапҡыр сәхнәлә ҡуйыла башлауы әлегә кеп кеүек хәтеремдә. Башҡорт театры сәхнәһендә беренсе тапҡыр оригиналь музыкаль комедияның ҡуйылған көнө тамашасылар тарафынан ҙурлап ҡаршы алынды һәм беҙ уға эшәнгәй ышаныс бағлап яңылышмағанбыҙ. Спектакль бөтә тамашасыларҙа ла хуплау тапты. Был пьеса уңлағы көйҙәреңең матур, ағымлы халыҡсан булыуы һәм тормошто дөрөҫ, художестволы формала сағылдырыуы менән һәм иҫке тормошҡа ҡарата әсе сатира булыуы яғынан айырыуса иғтибарға лайыҡлы.

Ҙур театр сәхнәләрендә генә түгел, әҫәр клуб сәхнәләрендә лә ҙур уңыш менән бара һәм тамашасылар тарафынан бик яратып ҡарала. Уны ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа башҡорт, татар халҡынан белмәгән һәм күрмәгән кеше юҡ, тип әйтһәң дә яңылыш булмаç.

Был пьеса бер нисә тиҫтә йылдар буйына театрҙарҙа бик йыш ҡуйылып килһә лә беҙ уны ҡабат-ҡабат яратып ҡарайбыҙ. Ул беҙҙе — тамашасыларҙы һис ялҡытмай, a киреһенсә, уны ҡараған һайын ҡарағы килә.

Р. Баймуллина,
Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

„Башмағым" колхоз-совхоз театры сәхнәһендә

Хәбибулла Ибраһимовтың «Башмағым» комедияһы һәм башҡа әҫәрҙәре республиканың колхоз-совхоз театрҙары репертуарҙарында һәр ваҡыт күренекле урында торалар.

Баймаҡ колхоз-совхоз театры Хәбибулла Ибраһимовтың «Башмағым» комедияһын тотош өс йыл буйына ҡуйып килде. Беҙ шул комедия менән Баймаҡ, Белорет, Әбйәлил, Учалы, Хәйбулла, Бөрйән райондарының колхозларында, совхозларында, промышленность предприятиеларында һәм эшселәр поселкаларында булдыҡ. Беҙҙең театр тарафынан ғына шул өс йыл ваҡыт эсендә «Башмағым» 180 тапҡыр ҡуйылды. Был спектакль барған клубтар, тамашасылар залдары һәр ваҡыт халыҡ менән тулы булды. Әҫәр бөтә урында ла ҙур уңыш менән файҙалана.

Хәбибулла Ибраһимовтың колхоз-совхоз театрҙары өсөн яҙылған бәләкәй күләмдәге башҡа күп кенә сәхнә әҫәрҙәре лә тамашасылар тарафынан йылы ҡаршы алына, колхоз ауылы эшсәндәре уларҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарайҙар һәм тыңлайҙар.

Ғ. Ирназарова,
Баймаҡ колхоз-совхоз театры артисткаһы.

Оҙон ғүмерле әҫәр

1924 йылда мин Өфөлә уҡый инем. Беҙҙе йыш ҡына Башҡорт государство академия театрына саҡырып, ҡайһы бер постановкаларға ҡатнаштыра торғайнылар. Беҙ — башҡорт, татар ҡыҙҙары бигерәк тә «Башмағым» пьесаһын сәхнәгә ҡуйғанда ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡатнаша инек.

Бынан 30 йыл элек сәхнәлә ҡуйыла башлаған был пьесаны тамашасылар әле лә бик ҡыҙыҡһынып һәм яратып ҡарайҙар. Сөнки унда Хәбибулла Ибраһимов ул саҡтағы тормошто художестволы формала дөрөҫ итеп сағылдыра алған. Уның музыкаһы еңел һәм аңлайышлы. Сөнки был пьесалағы көйҙәр халыҡ көйҙәренә нигеҙләнгәндәр.

Иптәш Ибраһимовтың киләсәктә лә шундай юғары художестволы әҫәрҙәр ижад итеүен ысын күңелдән теләйбеҙ.

М. Фаттахова,
Өфө нефть эшкәртеү заводының партия кабинеты мөдире.

Искусствоның ҡарт мастеры

Беҙҙә хәҙер театр ҡарамаған кеше юҡ. Театрға иң һирәк йөрөй тигән кеше лә һис юғында уң спектаклдең исемен әйтеп бирә ала. Әгәр ҙә һеҙ унан:

— Оригиналь спектаклдәрҙән нәмәләрҙе ҡаранығыҙ? — тип һораһағыҙ, ул үҙенең иң бәләкәй теҙмәһенә «Башмағым» комедияһын индермәй ҡалмаç.

Ҡарт драматург Хәбибулла Ибраһимовтың «Башмағым» комедияһы башҡорт, татар сәхнәләрендә иң күп ҡуйылған һәм оҙаҡ йәшәгән әҫәрҙәрҙең береһе.

Был әҫәрҙең сюжеты ла бик ябай. Әҫәрҙең геройҙары ла күптән инде беҙҙең тормоштан киткәндәр. Ләкин Х. Ибраһимов үҙенең был комедияһында бынан ярты быуат элек бик бушҡа тормош менән йәшәгән татар байҙарының артыҡ сикләнгән маҡсаттарынан рәхимһеҙ, шул уҡ ваҡытта тәжен оҫталыҡ менән көлә. Автор геройҙарын үҙ-үҙҙәренән көлдөртә. Шуға күрә лә совет тамашасылары был әҫәрҙе үткән тормоштоң инде мәңге ҡайтмаçҡа юғалған бер кәлкә мәйеше итеп ҡарайҙар һәм үҙҙәренең бөгөнгө коммунизм төҙөү кеүек бөйөк, данлы маҡсаттар менән йәшәүҙәренең үткәнгә ҡарағанда ниндәй юғары тороуы менән шатланалар. Художество әҫәрҙәренең яҡшылығын бик йыш ҡына уның ғүмере билдәләй. «Ул әҫәр һәүер һынауын үткән» тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. М. Фәйзиҙең «Ғәлиә Бану» драмаһы, Ғ. Камалдың «Банкрот», Ш. Камалдың «Хажи әфәнде өйләнә» һәм Х. Ибраһимовтың «Башмағым» комедияһы әнә шундай әҫәрҙәр.

Әгәр ҙә беҙгә башҡорт, татар сәхнәһендәге музыкаль комедиялар тураһында һүҙ йөрөтөргә тура килһә, беренсе һүҙҙе, һис шикһеҙ, «Башмағым»дан башлап китер инек. Сөнки «Башмағым»дан элек музыкаль комедия булманы, тип ҡыҫҡа әйтергә мөмкин.

Х. Ибраһимов драматургияла бер әҫәр менән генә туҡталып ҡалмай. Ул бынан тыш төрлө темаларҙа егермегә яҡын әҫәр яҙҙы. Дөрөҫ, уларҙың береһе лә «Башмағым» кеүек ваҡыт һынауын күтәрә алманылар. «Зөлхәбирә», «Иписий мәсьәләһе» кеүек әҫәрҙәре сәхнәлә яңғыраған һуң ятырыраған нәжегәй кеүек күренеләр ҙә, бер төрлө эҙ ҙә ҡалдырмай юғалдылар. «Еҙнәкәй» һымаҡ автор тарафынан бик матур уйланған комедия хәҙергә йыйнаҡлау, камиллаштереүҙе көтөп сәхнәнән төшөп тора. Ләкин Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яҙылған «Партизанка» пьесаһы һәм башҡа бик күп һандағы бер пәрҙәлек сәхнә әҫәрҙәре фашизмдең эшәкелеген асып һалыу ҙа бик ҙур урын тоттолар. Был әҫәрҙәр колхоз-совхоз театрҙарының, филармония бригадаларының шул ваҡыттағы концерт талантарҙа ауыл биреүҙәренә бик ҙур ярҙам иттеләр. «Партизанка» әҫәре алты колхоз-совхоз театры тарафынан бөтә Башҡортостан колхоздарында, район үҙәктәрендә уйналып сыҡты.

Мемлекәт та Ватан һуғышы йылдарында Х. Ибраһимов драматург, хикәйәсе булып ҙур ижад активлеге күрһәтте. Сөнки ул был ваҡыттың талабын бик яҡшы төшөндө.

Ватан һуғышы йылдарында башҡорт яҙыусылары, ғөмүмән искусство работниктәре, Украина яҙыусылары һәм искусство работниктәре менән ҙур ижади дуҫлыҡ урынлаштырҙылар. Һәр ике телгә әҙәби әҫәрҙәр тәржемә ителде, ғилми хеҙмәттәр яҙылды. Шул ваҡытта Х. Ибраһимов та профессор Ф. Е. Козицкий менән берлектә шағир Сәйфи Ҡудаш либреттоһы буйынса «Ватан өсөн!» исемендә бер пәрҙәлек опера яҙҙы. Бер Х. Ибраһимовтың ғына түгел, бик күп яҙыусыларҙың Ватан һуғышы йылдарында яҙылған күп кенә әҫәрҙәре ваҡытында бик яҡшы хеҙмәт күрһәттеләр ҙә, шул кәйефсә онотолоп та ҡалдылар. Ләкин был бер ваҡытта ла уларҙың әһәмиәтен төшөрмәй. Ваҡыты килер, әҙәбиәт, искусство тарихселәре Ватан һуғышы йылдарында яҙылған әҫәрҙәр, ТАСС тәҙрәләре, шиғри лозунгылар тураһында тикшеренеү мәҡәләләре яҙырҙар, диссертациялар яҡларҙар.

Х. Ибраһимов ижады драматург булыу менән генә сикләнмәй, ул талантлы композитор, музыка ҡоралдарында оҫта башҡарыусы. Башта был өлкәләге талантын скрипкасы, гармонсы итеп асҡан Х. Ибраһимов Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң үҙ булдыҡлылығына киң майҙан табырға тырыша һәм ул уны артыҡ тәрәнләп тормаçтан бик тиҙ таба. 1919 йылда Төркестан Армияһының политбүлеге менән фронтҡа китә. Ҡыҙыл Армияны музыкант булараҡ хеҙмәтләнгәнгә. Бынан ҡайтҡас, үҙ кеүек искусствоны киң халыҡҡа хеҙмәт иттерергә теләгән иптәштәр табып, Башҡортостандың элекке үҙәге Стәрлетамаҡта театр ойоштороуға ҡатнаша.

Ул үҙенең музыка өлкәһендәге көсөн һиҙеү менән бергә, нәҙәп, теоретик белемһеҙ, тик тәбиғи талант менән генә эшләүҙең күп файҙа килтермәйәсәгенә яҡшы төшөнә. Шуға күрә лә 1922 йылда Ленинградтағы музыка институтына уҡырға китә. Инде ул ябай скрипкасы, гармонсы, пианинола уйнаусы ғына түгел, рус классик музыкаһы менән таныш, теоретик белемле композитор-педагог. Хәҙер ул үҙен генә түгел, башҡаларҙы, йәш көстәрҙе тәрбиәләргә тейеш. 1925 йыл Ленинградтан Өфөгә ҡайтыу менән ул беренсе башлап оркестр ойоштора.

Шул ваҡыттан башлап уның общественный хеҙмәте тағы ла киң колас ала. Ул беренсе башлап асылған театр техникумында музыка уҡытыусы, халыҡ ижады йортонда ғилми работник — консультант була.

Башҡортостанда радио барлыҡҡа килә. Бында ла ул беренсе музыкаль редактор, уның туранан-тура етәкселеге менән радио аша концерттар бирелә, әҙәби монтаждар, радио газеталар музыка яғынан оформить ителә.

Өфөлә иң беренсе юғары уҡыу йорто — халыҡ мәғарифе институты асыла. Бында урындарға ебәреү өсөн квалификациялы уҡытыусылар әҙерләнә. Х. Ибраһимов унда эшләргә лә өлгөрә. Бында ла ул музыка уҡытыусыһы, үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәрҙә башҡорт бейеүҙәре, хор оркестрҙар менән етәкселек итә. Сөнки был йылдарҙа инде искусствоның тауышы заводтарҙа, ауылдарҙа яңыса яңғырарға тейеш ине. Уны ҡабаҡтарҙан, иҫке мунсаларҙан, ауылаҡ өйҙәрҙән сығарып клуб сәхнәләренә мендерергә кәрәк ине. 1

Шул ҙур общественный эштәр менән бергә, халыҡ музыка ижадын йыйнау, уларҙы нотаға һалыу кеүек ғилми хеҙмәттәр башҡара. Рус, башҡорт, татар халҡы араһында йырлана торған 50 көйҙө йыйнап, туплап матбуғатта сығара.

Бик күп йылдарҙан бирле халыҡ араһында:

Күк ирәнлек буйында,
Ҡара ерҙең ҡуйынында
    калп юлдары,

тип башлап торған бик матур көй йырлана. Ҡайһы ваҡытта был көйҙө бик матур итеп башҡарыусылар ҙа уның кем көйө, кем һүҙҙәре икәнен әйтеп бирә алмайҙар. Ләкин, йөрәкте елкендергес «Салауат маршы», тәрән лиризм менән яҙылған «Ай урағым» көйөнөң дә авторы кем икәнен күптәр әйтеп бирә алмайҙар.

— Кемдеке? тиһәң халыҡтыҡылыр, йыраҡҡа бик яҡын, тип яуап ҡайтаралар. Ә ул Хәбибулла Ибраһимовтыҡы тиһәң:

— Шулаймы ни? халыҡҡа ниндәй яҡын. — тип ҡәнәғәтләнеү менән яуап ҡайтаралар.

1924 йылда Хәбибулла Ибраһимов халыҡ шағиры М. Ғафури һүҙҙәренә «Ленин тураһында» тигән бик матур көй яҙҙы. Яҙылыу менән был көй халыҡ араһына бик тиҙ таралды. Уның музыкаһын өйрәнеү өсөн бер ваҡытта ла мәшәҡәтле, оҙон репетициялар кәрәкмәй. Музыка ҡоралы ашамы, йырлағанлымы иғтибар менән бер ике тапҡыр тыңлау етә. Ә уларҙың бик күбеһен иғтибарһыҙ тыңлау мөмкин түгел. М. Ғафури һүҙҙәренә яҙылған «Кесә йәштәр», С. Ҡудаш һүҙҙәренә яҙылған «Ҡайтырма, сибәрем», «Илде бирмәбеҙ» «Матурәм», Ғ. Гүмәр һүҙҙәренә яҙылған «Фәв иле», Батыр Вәлит һүҙҙәренә яҙылған «Башҡорт маршы», «Салауат маршы», Ғ. Әмири һүҙҙәренә яҙылған «Һағыныу», К. Даян һүҙҙәренә яҙылған «Зәйтүнә» һәм башҡа бик күп әҫәрҙәр совет тематикаһына яҙылған йырҙарҙы үҫтереү, уларҙың халыҡҡа таралыуында, һис шикһеҙ, ҙур урын тоттолар. Х. Ибраһимов әҫәрҙәрендә бик күп артистар, йырсылар үҙҙәренең ижад мөмкинлектәрен үҫтереүҙә күп кенә файҙа күрҙеләр.

Музыканы халыҡсан итеү тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетының тарихи ҡарарҙары беҙҙең композиторҙарыбыҙ алдына бик ҙур бурыстар ҡуйҙы. Был тәңгәлдә башҡорт музыкаһының, әлбиттә, күҙгә күренерлек уңыштары бар. Һуңғы ваҡыттарҙа композиторҙарҙың халыҡ ижадына яңын килеүҙәре байтаҡ асыҡ һиҙелә. Х. Ибраһимов музыкалары ла, әлбиттә, етешһеҙлектәрҙән азат түгел, унда ҡайһы бер примитивизм, йыш ҡына уңышлыҡ ҡабатлауҙар һиҙелә. Бигерәк тә хәҙер яҙғандарының элеккеләренә ҡарағанда ҡайтыш булыуы композиторҙы уйларға мәжбүр итергә тейеш. Ләкин халыҡтан өйрәнеүҙә беҙҙең бик күп йәш композиторҙарыбыҙға Х. Ибраһимовтан өйрәнерлек уңыштар бик күп әле.

Шул уҡ ваҡытта совет общественносы Х. Ибраһимовтың драматургия һәм музыка өлкәһендәге хеҙмәтен шарыҡлау менән бергә, унан тағы ла ныҡыраҡ ижад активлеген һорай. Был байтаҡ ҙур стажлы, алған тәжрибәле ижад кешеһенән беҙ быны көтергә хаҡлыбыҙ. Яңы һуғыш уты тоҡандырыусы Америка-Англия империалистарына ҡаршы алып барылған тыныслыҡ өсөн булған тыныс көрәшебеҙ бөтә совет кешеләрен яңы уңыштарға саҡыра.

С. Агиш.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Гранул ашламалар—мул урожай үҫтереүҙә мөһим сара

Республикабыҙҙың колхоздары һәм совхоздары алдында ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын күтәреү бурысы тора. Быны уңышлы үтәүҙә бөтә төр ашламаларҙы дөрөҫ һәм тулыһынса ҡулланыу ҙур әһәмиәткә эйә.

Быйыл Башҡортостан бик күп минераль ашламалар, шул иҫәптән, байтаҡ суперфосфат ашламалары алды. Һәр бер колхозда минераль ашламаларҙы дөрөҫ ҡулланыуҙы һәм шуның менән урожайҙы күтәреүҙе тәьмин итергә кәрәк.

Бығаса колхоздарҙа онталған суперфосфат тупраҡҡа һибеү юлы менән индерелде. Былай индергәндә үҫемлектәр был ашламалағы фосфорҙы әсетмәнең тик 10-20 процентен генә файҙалана алалар. Ашламаның ҡалған өлөшө тупраҡта юғалтылды. Был, ашламаны бик ҙур күләмдәрҙә, һәр гектарға 3-4 центнер суперфосфат индереүҙе талап итә.

Академик Лысенко минераль ашламаларҙы, беренсе нәүбәттә, суперфосфат ашламаһын ҡулланыуҙың яңы ысулдарын тәҡдим итте. Бында суперфосфат гранул рәүешендә, йәғни бәләкәй генә ваҡ киҫәктәр формаһында ҡулланыла. Гранул ашламалар араһында бигерәк тә органик-минераль ашламаларҙан эшләнгән гранулдар ҡиммәтле булып иҫәпләнә. Бындай гранулдарҙың һәр бер киҫәгендә суперфосфат та, шулай уҡ органик (мәҫәлән, серегән тиреҫ) ашламаһы ла була. Шуның менән бергә, гранул суперфосфат ашламаһын ашлыҡ орлоҡтарына аралаштырып төҙмә сәскес машинаһы менән сәсергә мөмкин. Бында һәр бер гектарға тик 50—100 килограмм ашлама тотонола. Шул уҡ ваҡытта уның урожайҙы күтәреүҙәге йоғонтоһо, онталған суперфосфатты һәр гектарға 3-4 центнер индергәндәге кеүек үк була.

Гранул суперфосфат ашламаһын ҡулланыу буйынса тәжрибә учреждениеләре, шулай уҡ колхоздар һәм совхоздар тарафынан киң күләмдәрҙә үткәрелгән һынауҙар шуларҙы күрһәттеләр. Гранул фосфаттарын һәм органик-минераль гранулдарын индереү, бигерәк тә уларҙы орлоҡ менән бергә рәттәргә сәскәндә, ашламаларҙың йоғонтоһо бик ҙур була. Ашламаларҙы бындай ысулда ҡулланыу, ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын күтәреүгә ҙур йоғонто яһау менән бергә, ашламаларҙы экономиялы тотонорға мөмкинлек бирә.

Гранул суперфосфаттарҙы ҡулланыу буйынса Башҡортостанда үткәрелгән һынауҙар ҙа яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ тәжрибә баҫыуында суперфосфат индерелмәйенсә тик азот-калийле ашлама индерелгән ҡалын ҡара тупраҡлы ерҙә бойҙай һәр гектарҙан 26,7 центнер урожай бирҙе. Ө заводта эшләнгән гранул суперфосфатты, һәр гектарға 30 килограмм иҫәбенән, орлоҡҡа ҡатнаштырып, ябай сәскес менән сәсеп индергән майҙанда бойҙай урожайы һәр гектарҙа 2,1 центнерға артты. Серегән тиреҫ менән суперфосфатты тигеҙ өлөштәрҙә ҡушып эшләнгән гранулды һәр гектарға 60 килограмм иҫәбенән индергән майҙанда һәр гектарҙа урожай 2 центнерға артты. Ә онталған суперфосфатты 4 тапҡыр арттырып (һәр гектарға 120 килограмм) культивация аҫтына һибеп индергән майҙан һәр гектарҙа урожайҙы 1,7 центнерға ғына арттырҙы.

Бөрө тәжрибә баҫыуында, һоро-урман тупрағында, гранул фосфатты рәткә индереү тағы ла яҡшыраҡ һөҙөмтә бирҙе. Бында фосфор ашламаһы индерелмәгән баҫыуҙа бойҙайҙың һәр гектарҙан алынған урожайы 18 центнер тәшкил итте. Ө онталған суперфосфатты (һәр гектарға 120 килограмм) һибеп индереү һәр гектарҙа урожайҙы 3,5 центнерға, суперфосфат гранулын һәр гектарға 30 килограмм иҫәбенән рәттәргә индереү урожайҙы 9,3 центнерға, серегән тиреҫ менән суперфосфат гранулын һәр гектарға 60 килограмм иҫәбенән индереү урожайҙы 5,3 центнерға артыҡ бирҙе.

Заводта эшләнгән гранул суперфосфатының, шулай уҡ колхозда әҙерләнгән серегән тиреҫ һәм суперфосфат гранулының орлоҡтар менән рәттәргә индергән һәр бер центнеры, онталған суперфосфатты һибеп индереүгә ҡарағанда, урожайҙы 4-5 центнерға артыҡ бирә.

Гранул суперфосфаттарын башҡа культуралар аҫтына индергәндә лә яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшелә. Өфө тәжрибә баҫыуында орлоҡ менән аралаштырып индерелгән 50 килограмм суперфосфат урожайҙы 5,2 центнерға арттырҙы. Бөрө районы Дзержинский исемендәге колхозда 4 центнер серегән тиреҫ һәм суперфосфат гранулы картоф урожайын 49 центнерға күтәрҙе. Ө онталған суперфосфатты индергәндә өҫтәмә урожай тик 28 центнер генә булғайны.

Былар бөтәһе лә беҙҙең республика шарттарында суперфосфат гранулының юғары эффектле булыуын күрһәтә.

Колхоздарҙа гранулдарҙы әҙерләүҙә иң ябай ысул — әйләнеп торған мискәләр ҡулланыу. Етештереүсәнлекте арттырыу өсөн бер үк күсәргә 2—3 мискә ҡуйырға һәм уны әйләндереү өсөн электр моторын, йәки ат көсөн файҙаланырға кәрәк.

Гранулдарҙы сәсеү көнөндә генә орлоҡ менән аралаштырырға кәрәк, юҡ иһә уларҙы бергә тотоу орлоҡтарҙың сығышын кәметеүе мөмкин. Заводта эшләнгән суперфосфат гранулы иләп таҙартыла һәм 3-5 миллиметр ҙурлыҡтағылары ҡулланыуға алына. Рәттәргә индереү нормаһы бер гектарға 50-75 килограмм. Органик һәм минераль ашламалар гранулын рәттәргә индереү өсөн суперфосфат һәм серегән тиреҫте һәм торфты әҙерләгәндә, уларҙың ауырлыҡтары бер тигеҙ булырға тейеш. Бер гектарға бындай 80-100 килограмм гранул индерелә. Органик-минераль ашламаларҙың гранул бөртөктәре 3-5 миллиметр ҙурлығында булырға тейештәр.

Картоф өсөн гранул әҙерләгәндә, уның серегән тиреҫ өлөшөн күберәк итергә кәрәк. Бер өлөш суперфосфатҡа 3-4 өлөш серегән тиреҫ булыуы яҡшы. Шулай уҡ серегән тиреҫ менән һыу ҡушып гранул эшләргә мөмкин. Бындай гранулдарҙы оялы ысулда индерергә кәрәк. Норма — гектарына 3-4 центнер.

Гранул ашламалар ҡулланыу урожайлылыҡты күтәреүҙә мөһим сара булып тора. Шуға күрә гранул ашламалар ҡулланыуға ауыл хужалығы органдары һәм колхоз етәкселәре ныҡ иғтибар итергә тейештәр.

Б. Шиленко,
Башҡортостан баҫыусылыҡ-тәжрибә станцияһының ашламалар бүлеге мөдире.



Өфө Ленин орденле нефть эшкәртеү заводының йәш нефтселәре производствола стахановса эшләү менән бер үк ваҡытта институттарҙа һәм техникумдарҙа уҡып, үҙ белемдәрен күтәрәләр.

Һүрәттә: Нефть техникумының ситтән тороп уҡыусы студенттәре (һулдан уңға) — 10-сы номерлы цехтың өлкән операторы П. Казанцев, цех мастеры А. Ульянов, 10-сы номерлы цехтың беренсе операторы П. Исаев, цех мастеры М. Фәтҡуллин һәм 9-сы номерлы цехтың өлкән инженеры А. Закиров иптәштәр заводтың техник библиотекаһында нәүбәттәге занятиеларға әҙерләнәләр.

Л. Яҡубов фотоһы.

КЛУБ ЭРГӘҺЕНДӘ ЛЕКТОРИЙ

Талалаевка ауыл клубы — колхозсыларҙың иң яратып йөрөгән урыны. Клуб эргәһендә 12 кешенән колхоз лекторийы ойошторолған. Унда уҡытыусылар, медицина работниктәре һәм ауыл хужалығы алдынғылары һәр төрлө темаларҙа доклад-тар менән сығыш яһайҙар. Мәҫәлән, колхоз фермаһының мөдире иптәш Побочий общественный малсылыҡтың продукт бирeүсәнлеген күтәреү юлдары тураһында, мәктәп директоры иптәш Моисеенко коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре тураһында доклад яһанылар.

Клубтың активистәре кистәрен газеталар уҡыйҙар, беседалар үткәрәләр, стена газеталарын һәм боевой листоктарҙы сығарыуҙа актив ҡатнашалар.

А. Клементьев,
Стәрлетамаҡ районы.

Балаларҙың йыр байрамы

ВЛКСМ-дың Черниковск ҡала комитеты ҡала мәғариф бүлеге менән берлектә балаларҙың йыр байрамын уҙғарҙы. Ҡаланың тарихында беренсе тапҡыр уҙғарылған был күңелле байрамға өс ай буйына ныҡлы әҙерлек алып барылды. Бөтә мәктәптәрҙә лә халыҡ көйҙәре, совет композиторҙарының әҫәрҙәре өйрәнелде.

Йыр байрамына төрлө мәктәптәрҙән 1 меңдән артыҡ бала килде. 24-се мәктәп уҡытыусыһы иптәш Ионасьян унда ҡатнашыусыларға йыр тураһында лекция һөйләне. Лекциянан һуң сәхнәгә төрлө мәктәптәрҙең хор коллективтәре бер-бер артлы сығып, бәхетле тормош һәм тағы ла яҡшыраҡ киләсәк тураһында йырҙар йырланылар.

15, 18, 22, 24-се мәктәптәрҙең һәм 1-се номерлы балалар йортоноң хор коллективтәре «Сталин тураһында йыр», «Щорс», «Шат егеттәр», «Йәш пионерҙар маршы» һәм башҡа йырҙарҙы яҡшы итеп башҡарҙылар. Был күңелле байрам залда булған бөтә уҡыусы балаларҙың аяҡ өҫтө баҫып «Советтар Союзы Гимнын» йырлауҙары менән тамамланды.

М. Мостафин.

КЫҪКА ХӘБӘРҘӘР

Талбазы. Ошо көндәрҙә район газетаһы редакцияһы селькорҙар һәм колхоз стена газеталары редакторҙарының кәңәшмәһен үткәрҙе. Кәңәшмәлә 40-тан артыҡ кеше ҡатнашты. Бында район газетаһы редакторы иптәш Мәлеков яҙғы сәсеү осоронда стена газеталарын ойоштороу һәм уларҙың бурыстары тигән темаға доклад яһаны. **В. Гаврилов.**

* * *

Белорет. Салауатов Ғариф (Зөйәк ауылы) бик оҫта һунарсылыҡ итә. Ул быйыл Заготживсырьёға 15 һуһар, 29 шәшке, 90 тейен һәм башҡа бик күп йәнлек тиреләре тапшырып, сезон планын 300 процентҡа үтәне.

Әле күптән түгел ул үҙенең һунарсы эттәре ярҙамында бер айыу тотоп ҡайтты. **Г. Зәйнуллина.**

* * *

Әбйәлил районындағы Аҫҡар урта мәктәбе уҡыусылары быйыл ГТО нормаларын отличнога тапшырҙылар. ГТО нормаларын тапшырыу өсөн булған ярышта беренсе һәм икенсе урынды алыусылар грамоталар менән бүләкләнделәр. **Шаһиев.**

* * *

Йоматау умартасылыҡ техникумы совхоз һәм колхоздарҙың умартаһылығында эшләү өсөн һуңғы 3-4 йыл эсендә 500-ҙән артыҡ умартасы әҙерләп сығарҙы. Техникум быйыл йәй тағы ла әҙерләтелгән колхоздарҙа эшләү өсөн 86 агроном сығара. Хәҙер был студенттәр республикабыҙҙың умартаға бай булған колхоздарына практикаға киттеләр. **Ә. Әхтәмов.**

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенән белдереү

ПХЕНЬЯН, 30 март. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 30 мартта ошоларҙы хәбәр итте: Халыҡ армияһы частәре Ҡытай добровольцтәре менән берлектә бөтә фронттарҙа ла дошманға уның йәнле көсөнә һәм техникаһына юғалтыуҙар килтереп, көслө һөжүм алып барыуҙа дауам итәләр.

Көнбайыш фронтта, Сеулдан төньяҡ-көнсығышыраҡ районда дошмандың к... леты атып төшөрөлдө.

Кореяға Грециянан өсөнсө батальон ебәрелде

СОФИЯ, 29 март. (ТАСС). Болгария телеграф агентствоһы ошоларҙы хәбәр итә:

«Азат Греция» радиостанцияһы, Греция хөкүмәте 27 мартта Кореяға грек һалдаттарынан һәм офицерҙарынан өсөнсө батальон ебәрҙе, тип белдерә. Был батальон Корея ла быға... леүҙәргә осраған грек монархо-фашистарын тәүге ике батальонына өҫтәләсәк.

Көнбайыш Германия хеҙмәтсәндәренең ҡайтанан милитаризациялауға һәм хәйерселеккә ҡаршы көрәше

БЕРЛИН, 29 март. (ТАСС). Бөтә Көнбайыш Германияла Көнбайыш Германияны ҡайтанан милитаризациялауға һәм халыҡ массаларының бик тиҙ хәйерселеккә төшә барыуҙарына ҡаршы хеҙмәтсәндәрҙең көслө хәрәкәте үҫә бара. Һуңғы аҙна эсендә был хәрәкәт бигерәк тә көсәйҙе. Көнбайыш Германияның күп һанлы ҡалаларында һәм халыҡ йәшәй торған пункттарында массовый забастовкалар һәм протест демонстрациялары булып үтте.

Берлиндәге демократик матбуғаттың белдереүенә ҡарағанда, күптән түгел бер үк көндә Нюрнбергта һуғыштан һуң иң ҙур һәм көслө демонстрация булған, унда 80 мең кеше ҡатнашҡан. Аугсбургта 30 мең кеше ҡатнашлығында демонстрация булған. Мюнхен, Фюрт, Людвигсхафен, Вупперталь, Ремшейд, Бремен, Ганновер һәм Көнбайыш Германияның башҡа ҡалаларында ҡайтанан милитаризациялауға һәм хәйерселеккә ҡаршы уларса меңләгән кеше баш күтәрҙе һәм демонстрацияға сыҡты.

Нюрнбергта демонстранттар: «Бөтһен Аденауэрҙың аслыҡ хөкүмәте!», «Һаҡтарҙы арзанайтығыҙ, министр Эрхардты эшенән алып ташлағыҙ!», «Пушка урынына май бирегеҙ, дивизиялар урынына эш хаҡтарын арттырығыҙ!» — тигән лозунгылар күтәреп сыҡтылар.

КӨНБАЙЫШ ГЕРМАНИЯ ЭШСЕЛӘРЕ РЕМИЛИТАРИЗАЦИЯЛАУҒА ҠАРШЫ, ТОРМОШ ШАРТТАРЫН ЯҠШЫРТЫУ ӨСӨН КӨРӘШКӘ ҠУШЫЛАЛАР

БЕРЛИН, 30 март. (ТАСС). АДН агентствоһының Кельндән алып хәбәр итеүенә ҡарағанда, Англия оккупация зонаһында — Кельнда «Форд-Вер» заводында сығарыла торған «Дас флистанд» газетаһы эшселәрҙең көрәш программаһын баҫып сығарған. Был программала ул заводтың производство советына кандидаттар «Көнбайыш Германияны ҡайтанан милитаризациялауға булған бөтә ынтылыштарҙы кире ҡағырға һәм Германияның бергәмлеген аяҡҡа баҫтырыу өсөн көрәшергә йөкләмә алһындар» тип тәҡдим итә.

Программала шулай уҡ түбәндәгеләргә өлгәшеү талаптары ҡуйылған: хәрби автомашиналар етештереүҙе туҡтатып, уның урынына граждандар ихтыяжына ҡарағ автомашиналар етештереүгә; заводтағы бөтә эшселәргә һәм хеҙмәткәрҙәргә ҡиммәтселектән өҫтәмә эш хаҡы түләнергә; Германияның бергәмлеген аяҡҡа баҫтырыуға; эшселәрҙән предприятиеларҙа идара итеүҙә ҡатнашыу хоҡуҡтарын булдырыуға; эш сәғәтенән тыш эшләтеүҙән баш тартыуға; йылына кәм тигәндә 14 көн отпуск биреүгә; әленән-әле арта бара барған эксплуатацияға ҡаршы көрәшеүгә; кеше йәшәрлек тормош шарттары булдырырға һәм башҡаларға өлгәшеү.

Бразилия президентенә Трумэндең йәшерен хаты тураһында Телепресс агентствоһы

НЬЮ-ЙОРК, 30 март. (ТАСС). Телепресс агентствоһының хәбәрсеһе Рио-де-Жанейронан (Бразилиянан) Бразилияның күптән түгел һайланған президенты Варгасҡа АҠШ президенты Трумэндең йәшерен хаты тураһында хәбәр итә. Америка президенты үҙенең хатында Варгасты Бразилиялағы демократик хәрәкәткә ҡаршы «ҡаты ҡул менән» яза бирергә, прогрессив газеталарға һәм Бразилия профсоюз хәрәкәтенә ҡаршы ныҡлы саралар күрергә саҡыра. Трумэн Варгасты Аргентина президенты Перондың «ытырҡаларына» айырыуса иғтибар итергә өндәп бирә. Унан ары ул, Варгасты президент постына һайлау Кореяға «максималь һанда һалдаттар» ебәреүҙе тиҙләтергә ярҙам итер тигән ышаныс белдерә.

ХРОНИКА

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының 1951 йылдың 31 мартындағы Указы менән иптәш А. К. Ермолаев, икенсе эшкә күсеүе айҡанлы, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең беренсе Урынбаҫары вазифаларынан бушатылды.

Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

ЯПОНИЯ—АЗИЯЛА АМЕРИКА АГРЕССИЯҺЫНЫҢ БАЗАҺЫ

Америка империалистәре үҙҙәренең Алыҫ Көнсығышта агрессияларын киңәйтеү пландарында Японияға ҙур роль бирәләр. Уларҙың фекерҙәре буйынса, Европала хәрби авантюралар өсөн плацдарм һәм пушка итенең сығанағы Көнбайыш Германия булһа, Япония милитаризмен ҡайтанан торғоҙоп был илде лә үҙҙәренең Азиялағы шул уҡ плацдарм һәм пушка итенең сығанағына әүерелдерәләр.

Оккупациялаусы держава булыуҙан файҙаланып, АҠШ тәүге аҙымдарында уҡ, Японияны демилитаризациялау һәм демократизациялау тураһында Потсдам декларацияһында яҙылған программаны тупаҫ рәүештә Япония милитаризмен аяҡҡа баҫтырыу һәм был илде Американың Алыҫ Көнсығыштағы хәрби-стратегик базаһына әүерелдереү программаһы менән алмаштыра башланылар.

Америка оккупацион властәре Японияла уның элекке реакцион режимының нигеҙен — экономикала капиталистик монополияны һәм ауылда феодаль мөнәсәбәттәрҙе шул көйөнсә ҡалдырҙылар. Оккупация башланғандан һуң, күп тә үтмәй, Америка генералы Макартур штабы Японияны бөтә йүнәлештәр буйынса хәрби-политик, экономик һәм идеологик йүнәлештәр буйынса туранан-тура ремилитаризациялауҙы тормошҡа ашырыуға күсте.

Бер үк ваҡытта, американлылар Япония территорияһында үҙҙәренең хәрби плацдармдарын булдырыу буйынса ҡыҙыу эш башланылар. Хәрби-һауа һәм хәрби-диңгеҙ базаларын төҙөү, стратегик юлдар һалыу, хәрби ҡоролмалар төҙөү, хәрби предприятиеларҙы аяҡҡа баҫтырыу һәм киңәйтеү һәм башҡа шундай эштәр башланды. 1948 йылда уҡ инде американлыларҙың Японияла 100-ҙән артыҡ аэродромдары бар ине.

Японияның хәрби предприятиеларен аяҡҡа баҫтырып һәм киңәйтеп, Америка империалистәре уларға хәрби ҡоралдар етештереүгә ҙур һанда заказдар бирҙеләр. «Мицубиси» концерны американлылар өсөн алыҫҡа ата торған орудие һәм танкыға ҡаршы пушка етештерә башланы, «Исикавадзима» заводтары танкылар һәм броневиктәр, «Ниппон Каяку» концерны— шартлатҡыс матдәләр етештереү өсөн заказдар алды.

Макартур штабының официаль мәғлүмәттәре буйынса, Японияла американлыларҙың хәрби заказдары 1951 йылдың 14 ғинуарына 200,5 миллиард доллар тәшкил итте, йәғни, үҙған йылдың 25 декабренән алып 18 миллион самаһы долларға үҫте.

Японияның аяҡҡа баҫтырылған хәрби промышленность потенциалын үҙҙәренең агрессия маҡсаттарында файҙаланыу менән бер үк ваҡытта, америкал-япон реакцияһы илдең ҡоралы көстәрен дә аяҡҡа баҫтыра. Бынан өс йыл элек үк төҙөлгән «судноларҙы йөрөтөүҙе һаҡлау буйынса совет», Ҡытай матбуғаты күрһәтеүенсә, йәшерелгән хәрби-диңгеҙ министерствоһы булып тора. Был советҡа төҙәгәс, уға 125 хәрби карап бирелде, һуңынан уларҙың һаны байтаҡ артты.

Ҡала, ауыл тимер юлы полицияһы тигән һылтау аҫтында Америка оккупанттары Японияның ҡоро ер армияһын да аяҡҡа баҫтыра башланылар. 300 мең самаһы кешенән торған был полиция көстәре, элекке хәрби округтарҙың территорияларына тура килтерелеп ойоштороу яғынан, Японияның 6 районына бүленгәндәр.

Был полиция көстәренән тыш, Кореяла АҠШ агрессияһы башланғандан һуң күп тә үтмәй, Макартур приказы буйынса полиция резервтәре тип аталған корпус барлыҡҡа килде. Был корпус составының һаны башта 75 мең кешенән билдәләнгән. Сит ил матбуғаты, атап әйткәндә, Америка матбуғаты, был корпусҡа «полиция» исеме тик йәшереү өсөн генә йәбештерелгән, тип асыҡтан-асыҡ яҙа. Ысынында ла, тип тапый Америка газетаһы «Дейли мейл» резервтәге полиция корпусы япон армияһының 75 меңле ядроһы булып тора.

Азияла агрессив хәрәкәттәрҙе йөйелдереүгә әҙерләнеп, Америка империалистәре был әҙерлеккә япон милитаристәрен һаман киңерәк ылыҡтыра баралар. Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, генерал Макартур 1950 йылдың аҙағына инде Японияның 400-ҙән артыҡ ҙур хәрби енәйәтселәрен, шул иҫәптән, яуыз милитарист Сигемицуны азат иткән.

Америка империалистәре Кореяға һәм Ҡытай халыҡ республикаһына ҡаршы туранан-тура агрессия актына күсеп, Японияны үҙҙәренең базалары сифатында файҙаланыуҙы арттыра баралар. Кореяға беренсе Америка дивизиялары АҠШ-тың Япониялағы оккупацион ғәскәрҙәре составынан күсерелеүе билдәле; интервенцияның тәүге көндәренән үк, Америка япон аэродромдарын файҙалана; япон порттары Америка карапҙарының базаһына әүерелгән. Япония Американың Кореяға ебәрелә торған ғәскәрҙәренең һәм хәрби материалдарының туплаңыу пунктына әйләнде.

АҠШ империалистәренең Кореялағы агрессияһында Японияның киң ҡатнашыуын билдәләп, Америка газетаһы «Чикаго дейли ньюс» 1950 йылдың ноябрендә үк «Японлдарҙың ярҙамы булмаһа беҙ бәлки Кореянан ҡыуылған булыр инек», тип яҙҙы.

Американың Тайвандағы агрессияһында ла Япония роленең мөһимлеге шунан кәм түгел.

Макартур үҙенең яңы йыл мөрәжәғәтендә АҠШ ҡайтанан ҡоралландырылған Японияны «Азияның ҙәмышына көслө йоғонто яһау өсөн файҙаланырға уйлай», тип оятһыҙ рәүештә асыҡтан-асыҡ белдерҙе.

Джон Фостер Даллестең Японияға барып ҡайтыуы, хәҙер Японияла, Германиялағы кеүек үк, ялланған армия булдырыу тураһында мәсьәлә Америка империалистәренең практик хәрәкәттәре булыуын иҫбат итә. Уҙған йылдың декабрь урталарында уҡ әле, Макартур штабы йәшерен приказ бирҙе, уға ярашлы рәүештә Япония хөкүмәте тиҙ көндә бер миллион кешенән армия, биш йөҙ мең тонна һыйҙырышлы хәрби-диңгеҙ флоты һәм бер мең самолет составында авиация булдырырға тейеш. Был армия Америка агрессив көстәренең бер өлөшө булып әүерелергә тейеш, уларҙа бөтә төп команда посттары американлылар ҡулында буласаҡ, ә ауыр ҡорал АҠШ иҫәбенә алынасаҡ.

Япония менән ярашыу договоры төҙөүгә ҡарата АҠШ-тың политикаһы ла ошо агрессив маҡсаттар менән билдәләнә. АҠШ Японияға бер яҡлы ярашыу договорын бәйләп, Японияны оккупациялауҙы оҙайтырға һәм унда үҙ ғәскәрҙәрен һаҡлап ҡалырға теләй.

Японияны ҡайтанан ҡоралландырыуҙы көсәйтеү һәм уны Америка империалистәренең хәрби авантюраларына тағы ла киңерәк ылыҡтырыуға ынтылыу япон халҡында үҫә барған ҡаршылыҡ тыуҙыра. Америка агрессорҙары һәм япон реакцияһы Японияны тағы ла милли катастрофа юлына индерергә тырышҡанлыҡтарын халыҡ массалары барған һайын асырыраҡ аңлай баралар.

В. Харьков.

„ГЛАВКИНОПРОКАТ"-тың БАШКОРТОСТАН КОНТОРАҺЫ
республика экрандарына
П. Павленконың „Ялан ҡояшы" повесе буйынса
„ЯЛАНДА"



тигән яңы төҫлө художестволы фильм сығара.
А. ГАЛИЧ сценарийҙе.
Б. БУНЕЕВ, А. УЛЬЯНЦЕВ постановкаһы.
Ролдәрҙе башҡаралар: артистәр—М. Бернс, В. Санаев, П. Волков, Б. Елисеев, А. Тарасов, Наташа Защипина һәм башҡалар.
М. ГОРЬКИЙ исемендәге киностудия производствоһы 1951 йыл.
„ГЛАВКИНОПРОКАТ" сығарылышы
„БАЛЫҠСЫ ҺӘМ БАЛЫҠ ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТ"
(А. С. Пушкин буйынса) тигән төҫлө мультпликацион фильм күрһәтелә.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре—2-72-26, информация һәм совет төҙөлеше бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре—2-90-22.

НО 2420

Өфө газеталары издательствоһы типографияһы.

Тиражы 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға. 1951 йыл № 65 (8782) 3 апрель шишәмбе

Хаҡы 20 тин

Бөгөнгө номерҙә:

МАЙ АЛДЫ СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШЫН ХАЛҠ ХУЖАЛЫҒЫНЫҢ БӨТӘ ТАРМАҠТАРЫНДА КИҢ ЙӘЙЕЛДЕРӘЙЕК! М. Мостафин. — Вәғәҙә намыҫ менән үтәләр (1-се бит).
Х. Ғәбәйҙуллин. — Сәғәт графиге менән эшләйәсәкбеҙ (1-се бит).
Ф. Рябов. — Юғары урожай — тракторист хеҙмәтенә иң яҡшы баһа (1-се бит).
В. Простенюк. — Яҙғы баҫыу эштәрендә МТС-тарҙың эске резервтарын тулыһынса файҙаланырға (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ғ. Ғәзизуллина. — Кадрҙарҙы тәрбиәләүгә иғтибарҙы көсәйтәйек! (2-се бит).
Г. Михеев. — Техниканы тулы ҡеүәтендә эшләтеү өсөн (2-се бит).
НЕФТЬ ПРОМЫШЛЕННОСЕНДӘ АРТАБАН ЯҢЫ ЕҢЕҮҘӘР ӨСӨН. Ш. Мөхәмәтшин. — Техниканы тулыһынса файҙаланыу өсөн көрәшәбеҙ (3-сө бит).
Р. Сәйфетдинов. — Рационализаторҙарҙың яңы методтары (3-сө бит).
Ш. Ғәтиәтуллин. — Тыныслыҡ вахтаһында (3-сө бит).
Н. Боляндинов. — Тиҙләтелгән метод менән бораулауҙа ҡайһы бер тәжрибәләр (3-сө бит).
С. Агиш. — Счетоводтар (4-се бит).
СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. А. Әхмәрөв. — Парник хужалығын ойоштороу (4-се бит).
Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Төҙәлеш эшен яҡшыртыу хеҙмәтсәндәрҙең культура-тормош кимәлен артабан күтәрә

...ге Башҡортостандың төҙәүселәре ...дары бурыстар ҡуя. Был көндәрҙә ...эштәре айырыуса киң ҡолас ...тейеш. Сөнки башлана саҡ төҙәлеш ...хеҙмәтсәндәр өсөн яңы торлаҡ ...төҙәләргә, иҫкеләренә капиталь ...үткәрелергә тейеш. Коммуналь ...тиәләр, культура учреждениеләре ...күп һалынасаҡ. Ҡалаларҙы төҙөкләндереү эшләнәһе эштәр күп.

...бөтәһе лә хеҙмәтсәндәрҙең ...шарттарын һәм культура кимәлен артабан күтәреүҙә сталинсе хәстәрлек ...ҡты сағылышы. Был эш шуға ...беҙҙең Тыуған илебеҙҙә государ... ...әтендәге мөһим бурыс булып ...Партияның XVIII съезында иптәш ...: «Беҙ бөтә эшселәрҙе һәм бөтә ...сәндәрҙе культуралы һәм белемле ...телә йбеҙ һәм беҙ уны ваҡытында ...ләрбеҙ», — тигәйне. Бөйөк юлбашсыбыҙҙың был күрһәтмәләре тормошҡа ашырыла һәм бының өсөн ...шарттар тыуҙырыла. СССР Верховный Советы сессияһы 1951 йыл өсөн ...ль-культура сараларына 120,8 миллиард һум ассигнование бүлде. Был государство бюджетының 26,8 процентын тәшкил итә.

...ҙәптән беҙҙең республикабыҙ ...ла бик ҙур средстволар бүлентән. ...хеҙмәтсәндәр өсөн бик күп яңы ...йорттары, коммуналь предприятие..., культура учреждениеләре, мәктәп..., балалар баҡсалары һәм яслеләр, да... учреждениеләре төҙөү кеүек бик ...эштәр башҡарыласаҡ.

...йылдарҙа ла Башҡортостанда ...эштәр байтаҡ ҡына эшләнгәйне. ...төҙәлеш ойошмалары, предприя..., партия һәм совет органдарының ...ләре хөкүмәтебеҙ һәм партиябыҙ ...был ҙур ярҙамды рациональ ...ланыу өсөн бөтә көстәрен һалдылар. ...листик принципиаллектәрен күр....

Октябрьский — республикабыҙҙың иң ...ҡалаһы. Бында тәүге бәлтә тауышы ишетелгәнгә күп йыл уҙмаған әле. ...эшселәр поселкаһынан ҡала булып ...лә биш кенә йыл. Тик ошо ...ғы ғүмер эсендә бында хеҙмәтсәндәр ...ҡатлы, яҡшы төҙөкләндерелгән бик күп йорттар һалынды. Улар ...түгел, кварталлап, тотош урам... ...барлыҡҡа килделәр. Күп мәктәптәр .... Ундағы дауалау учреждениеләре ...ҙың кешеһе һоҡланып ҡарар... «Эҫәләргә бүләк» тип йөрөтөлгән ...тыуҙырыу йорто ғына ни тора!

Ҡаланың үҙәк урамдары, юлдары ас...ланған. Бында ҙур парк, стадион .... Төҙәлеп ятҡан биналар, учреждение..., торлаҡ йорттары ла күп.

Был эштә ҡаланың һәр предприятиеһе ...тың ҡатнаша. Хеҙмәтсәндәр үҙҙәре лә ...ҡалаларын төҙөкләндереү һәм байыҡ... ...ға ҙур көс һалалар. Ә ҡала Советы ...ҡомы председателе иптәш Закиров) ...партия ҡала комитеты (секретары ...иптәш Борольков) ҙур ойоштороу эштәре ...башҡарылар, төҙәүселәрҙе, ҡала хеҙмәт...ләрен был мөһим бурысты үтәүгә рух...ландырҙылар. Ҡалағы төҙөү эштәрен ...башҡарыуҙа Туймазы территориаль төҙөлеш управлениеһе, бигерәк тә уның икенсе номерлы управлениеһе коллективының ...хеҙмәте, эш тәжрибәләре, ошо төҙәлештәр... батырлыҡ күрһәтеүсе төҙәүселәрҙең ...уңыштары һоҡланырлыҡ. Икенсе ...номерлы управление коллективы ҡаланың ...йыллығы хөрмәтенә лә пландан тыш ...бик күп торлаҡ майҙанын эксплуатацияға ...тапшырҙы.

Хеҙмәтсәндәр тураһындағы сталинсе хәстәрлекте тормошҡа ашырыу өсөн барлыҡ көрәштең гүзәл өлгөләре республикабыҙҙың һәр ҡалаһында, һәр районында .... Металлургтар ҡалаһы төҙөкләндерелә. ...Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларында бик ...яңы йорттар төҙөлдө. Черниковск ҡалаһы ла ҙур аҙымдар менән үҫә. Яңы ...поселкалары барлыҡҡа килә.

Партия һәм хөкүмәтебеҙҙең практик ...ярҙам күрһәтеүе арҡаһында үҙған йылда республикабыҙҙың башҡалаһы Өфөлә лә торлаҡ һәм коммуналь хужалыҡ төҙәлеше һәм төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр башҡарылды. Бер йыл эсендә генә 17,5 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙәлеп эксплуатацияға тапшырылды. Молотов районында яңы кинотеатр төҙәлдө. Водопровод селтәре лә байтаҡ ҡына киңәйтелгән. Коммуналь предприятиеләрҙең эше лә яҡшыртылды.

Ләкин, өлгәшелгән уңыштар ни саҡлы ғына ҙур булһалар ҙа, ҡалаларҙы үҫтереү, төҙөкләндереү темпы партия һәм хөкүмәтебеҙ тарафынан ҡуйылған бурыстарға эйәрә алмай. Яңы төҙәлештәр менән шөғөлләнеү ҡайһы бер урындарҙа насар тора. Совет хөкүмәтенең беҙҙең республикабыҙҙағы торлаҡ фондын һәм коммуналь хужалығын үҫтереү, культура учреждениеләрен төҙөү өсөн бүлгән средстволары тулыһынса үҙләштерелмәй. Өфө ҡалаһында 1950 йылда бындай средствоның 87,8 проценте генә үҙләштерелгән. Ә торлаҡ майҙандарын эксплуатацияға биреү кимәле ни бары 62,6 процент кенә тәшкил итә.

Был етешһеҙлектә төҙәлеш ойошмалары менән бергә, промышленность предприятиеләренең дә ғәйептәре ҙур. Башҡортостан тауар-транспорт управлениеһе (начальнигы иптәш Воробьев) үткән йылда үҙ коллективына торлаҡ майҙаны төҙөү өсөн бирелгән средствоның 45,6 процентын генә төҙәлешкә үҙләштерҙе. Телефон аппараттары һәм электротехника заводтарында был һан 14,6 процент кенә тәшкил итә. «Башнефтезавод» берекмәһе һәм тау оборудованиеләре заводында ла ошондай уҡ хәл.

Бындай предприятиеләрҙә төҙәлеш өсөн фонд буйынса бирелә торған материалдарҙы ғына көтөп торалар. Ә кирбес, таш, ағас кеүек урындағы төҙәлеш материалдары әҙерләү өсөн сара күрелмәй. Телефон аппараттары һәм электротехника заводтарына үҙ кирбес заводтарын булдырыу өсөн ике йыл буйы средство бирелә. Ләкин был эшкә башланылмаған да әле, средство файҙаланылмай.

Төҙәлеш ойошмаларының күбеһендә производство процестары насар ойошторолған. Штукатурсы Сычев, ташсы Диченко, маляр Сайкин иптәштәрҙең гүзәл методтары әле булһа төҙәүселәр тарафынан киң ҡулланылмай. Шулай уҡ тиҙләтелгән метод менән эшләү ҙә насар индерелә. Төҙәлештә даими кадрҙар булдырыу, эшселәрҙең квалификацияһын күтәреү өсөн көрәш юҡ. Был хеҙмәт етештереүсәнлегенең түбән булыуына килтерә. Өфө тимер юлының 5-се номерлы төҙәлеш участкаһында ул 95 процент, Башнефтестрой тресының 4-се номерлы участкаһында 89 процент кенә тәшкил итә.

Өфөлә шулай уҡ коммуналь хужалыҡ төҙәлешө лә насар бара. Трамвай селтәрен киңәйтеүгә бүленгән средство 52 процентҡа генә файҙаланылған. Кинотеатр төҙөүгә бүленгән средство тулыһынса файҙаланылмай. Ошондай етешһеҙлектәр булыуға ҡарамаҫтан, бындай мөһим мәсьәләләр менән Өфө ҡала Советы исполкомы етәкселек итмәй. Партияның тәүге ойошмалары эшкә контроллек итмәйҙәр. Етешһеҙлектәргә үҙ ваҡытында сара күрелмәй. Төҙәүселәр коллективтары араһында политик-массовый эш йомшаҡ ойошторолған.

Быйыл торлаҡ йорттарын төҙөү, ремонтлау, коммуналь хужалыҡты үҫтереү, культура учреждениеләре һалыу һәм ҡаланы төҙөкләндереү буйынса ҡуйылған бурыстар айырыуса ҙур. Бындай эш өсөн Өфө ҡалаһында ғына ла унар миллионлаған һум средство үҙләштерелергә тейеш. 23,5 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны, 32,5 квадрат метр культура-тормош учреждениеләре төҙәргә кәрәк. Ә бөтә республикала был бигерәк тә ҙур һандарҙы тәшкил итә.

Совет хөкүмәтенең һәм большевиктар партияһының хеҙмәтсәндәрҙең яҡшы көнкүрешенә һәм культура төҙәлешенә күрһәткән ярҙамын тулыһынса файҙаланыу өсөн партияның тәүге ойошмаларына, район һәм ҡала комитеттарына, совет һәм профсоюз органдарына бик ҙур эш башҡарырға, ысын көрәш ойошторорға, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү нигеҙендә, артта ҡалыусылыҡты бөтөрөп, яңы уңыштарға өлгәшеүҙә тәьмин итергә кәрәк. Был һәр совет кешеһенең намыҫлы бурысы һәм ул һис һүҙһеҙ үтәлергә тейеш. Сөнки уны хеҙмәтсәндәр талап итә, уны үтәүҙә партиябыҙ һәм иптәш Сталин үҙе атайҙарса ярҙам итә.

Ағас әҙерләүҙә алдынғы колхоздар бүләкләнделәр

Тәтешле районының күп кенә колхоздары быйыл ағас әҙерләүҙең сезон планын арттырып үтәнеләр. Мәҫәлән, «Социализм» колхозы членлары социалистик ярыш нигеҙендә эшләп, ағас әҙерләүҙең ҡырҡыу һәм сығарыу планын 111 процентҡа үтәүгә өлгәштеләр. Был ...ҙың правлениеһе планды арттырып үтәгәне өсөн велосипед менән һәм колхоз председателе иптәш Диаров кеҫә сәғәте менән бүләкләнде. «Фәнгә» һәм Энгельс исемендәге колхоздар членлары ла ағас әҙерләү планын 110 процентҡа үтәгәндәре өсөн патефон, велосипед һәм башҡа ҡиммәтле әйберҙәр менән бүләкләнделәр.

А. Абзаиров.

МАЙ АЛДЫ СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШЫН ХАЛҠ ХУЖАЛЫҒЫНЫҢ БӨТӘ ТАРМАҠТАРЫНДА КИҢ ЙӘЙЕЛДЕРӘЙЕК!

Май алды социалистик ярышы республика хеҙмәтсәндәре араһында яңы производство активлығы тыуҙырҙы. Улар производство заданиеләрен срогынан алда һәм арттырып үтәү өсөн күтәренке йөкләмәләр алалар.

Социалистик ауыл хужалығы эшсендәре яҙғы сәсеүҙе иң яҡшы агротехник срогтарҙа һәм яҡшы сифатлы итеп үтәргә һүҙ бирәләр.

Сәғәт графиге менән эшләйәсәкбеҙ

Минең трактор бригадаһы менән етәкселек итеүемә хәҙер 13 йылдан артыҡ ваҡыт үтте. Был ваҡыт эсендә мин тракторҙар паркын юғары етештереүсәнле файҙаланыу, игенселектең культураһын күтәреү буйынса бик бай тәжрибә тупланым.

Һуңғы бер нисә йылда бригада үҙ эшендә алдынғылар методын ҡулланыу буйынса ҙур аҙым яһаны. Эштең уңышын кадрҙар хәл итә. Шуға күрә мин уларҙы һайлап алыуға, уларҙың бригадала даими эшләүҙәренә, эш тәжрибәләрен һәм квалификацияларын күтәреүгә серьез иғтибар бирәм.

Бригадала хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу ҙа шулай уҡ бик мөһим. Яҙғы баҫыу эштәре башланыуҙан алда МТС-тан баҫыу эштәренең аныҡ планын алабыҙ һәм уны бригада членлары һәм үҙебеҙ хеҙмәтләндергән колхоздың вәкилдәре ҡатнашлығы менән ентекләп өйрәнәбеҙ. Механизаторҙарҙың колхозсылар менән хеҙмәттәге дуҫлығы бына шулай тыуа. Машиналарҙың буш йөрөүҙәренә юл ҡуймау өсөн маршруттарҙы бик ентекләп өйрәнәбеҙ. Баҫыу эштәрен беҙ сәғәт графиге менән алып барабыҙ.

Техник талаптарҙы тулыһынса һаҡлау өсөн беҙ МТС-тың өлкән агрономының графигы нигеҙендә баҫыу эштәренә ҡулайлаштырып бригаданың тағы ла өҫтәмә графигын төҙөнөк. Яғыулыҡтың һаҡланыу, заправка яһау урындары таборҙы ойоштороу талаптарынан сығып эшләнде.

Трактористарға заданиеһе бер көн алдан белдереп, шунда уҡ уҙған тәүлеккә эшкә йомғаҡ яһаясаҡбыҙ. Мин ВКП(б) члены, партия ойошмаһының тапшырыуы буйынса бригада членлары араһында агитацион-массовый эш алып барам һәм был эште бригада алдында торған бурыстарға бәйләйем.

Беҙ уҙған йыл «С—80» тракторында 3830 гектарға тиклем ер эшкәртеүгә һәм 1600 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһауға өлгәшкәйнек.

Беҙҙең бригада Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең саҡырыуына ҡушылып, быйыл 300 гектар майҙанда бойҙайҙың һәм 200 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға, шартлы һәр бер тракторға 1000-әр гектар ер эшкәртергә, тракторҙарҙың ремонт-ара срогын 500 гектарҙан алып 800 гектарға тиклем оҙонайтырға, бер гектарҙы эшкәртеүҙең үҙенә төшөү хаҡын кәмендә ике һумға арзанайтырға, ремонт өсөн бүленгән средствоның 15 процентына экономия яһарға, бөтә тракторҙарҙы һәм тағылма инвентарҙарҙы социалистик һаҡлауға алырға, тигән йөкләмә алды.

Беҙ был йөкләмәбеҙҙе намыҫ менән үтәйәсәкбеҙ, уның өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлектәр бар.

Хөрмәт Ғәбәйҙуллин,
Прибют МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры.

Вәғәҙә намыҫ менән үтәләр

Производство бригадаһы — колхозда хеҙмәтте ойоштороуҙа төп форма ул. Баҫыусылыҡ бригадаһы баҫыуҙарҙа машина көсөн тағы ла тулыраҡ файҙаланыу, колхозсыларҙың хеҙмәт инициативаларын күтәреү һәм уларҙы общественный хужалыҡ интерестәре рухында тәрбиәләү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейеш.

Мин колхозда беренсе йыл ғына баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры булып эшләмәйем. Беҙҙең бригада яҙғы сәсеүгә яҡшы әҙерләнде. Бригадала хеҙмәт дисциплинаһы байтаҡ нығыны. Колхозсылар тапшырылған эште намыҫ менән башҡаралар.

Минең бригадаға беркетелгән ике сәскесте, 8 һабанды, 17 тырманы һәм 2 культиваторҙы отлично сифатлы итеп ремонтланыҡ.

Быйыл беҙ тулыһынса сортлы орлоҡтар ғына сәсеүгә күсәсәкбеҙ. Производство планында ҡаралғанса 280 гектар майҙанға етерлек сортлы орлоҡ тупланыҡ. Уларҙың сығыштары яҡшы. Мәҫәлән, бойҙай орлоғоноң сығышы 97, һоҙоноң 93 процентҡа етә. Бынан тыш, 12 гектар майҙанда күп йыллыҡ үлән сәсәсәкбеҙ.

Урожайҙы күтәреүҙә агротехник саралар комплексын үтәп барыу айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Шуның өсөн беҙ ужым, күп йыллыҡ үлән сәселгән майҙандарҙа һәм туңға һөрөлгән ерҙәрҙә ҡар тотоу үткәрҙек, дым күп буласаҡ. Ҡарҙың ҡалынлығы 1 — 1,5 метрға етә. Ләкин бының менән дә тынысланып ҡалмайынса, хәҙер ҡар һыуҙары тотоу үткәрәсәкбеҙ. Сөнки дым ни тиклем мул булһа, урожай ҙа шул тиклем юғары буласаҡ.

Бригада тиреҫ туплау планын да үтәне. Беҙ колхоз правлениеһе тарафынан бирелгән планды үтәү менән генә сикләнмәйбеҙ. Урындағы ашламаларҙы мөмкин тиклем күберәк туплау өсөн көрәшәбеҙ. Шулай уҡ көл һәм ҡош тиҙәге тупланыҡ. Сельхозснаб складынан 100 центнер суперфосфат һәм хлорлы калий ашламалары ташыныҡ.

Яҙғы баҫыу эштәре планын бригадалағы йыйылышта бөтә колхозсылар ҡатнашлығында ентекләп тикшерҙек. Бригаданың һәр бер члены үҙенең ҡайһы баҫыуҙа, ниндәй участкала эшләйәсәген яҡшы белә, яҙғы баҫыу эштәре 8 эш көнөндә тамамланасаҡ.

Дымды тупраҡта ваҡытында һаҡлап алып ҡалыу, эш планында ҡаралғанынса, беҙҙең беренсе бурысыбыҙ булып тора. Туңға һөрөлгән ерҙәр ҡарҙан асылыу менән үк тырматыласаҡ. Был эште һуңлатырға ярамай, үҙ ваҡытында үткәреү өҫтәмә урожай алыуҙы тәьмин итә. Быны беҙ уҙған йылдарҙа эш тәжрибәбеҙҙә асыҡ күрҙек. Мәҫәлән, 1950 йылда беҙ иртә яҙ бер ҡат тырматылған ерҙәрҙә бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 13-әр, ә ес ҡат тырматылған ерҙәрҙә 22,5-әр центнер урожай алдыҡ.

Ауыл хужалығы эштәрен ҡыҫҡа срокта башҡарып сығыу, беренсе нәүбәттә, бригадала хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуға бәйләнгән. Колхозсылар даими рәүештә тик бер бригадала ғына эшләргә тейештәр. Беҙҙең бригадала күпселек һабансылар, тырмасылар, сәсеүселәр оҙаҡ йылдар буйына бер үк эште башҡаралар һәм был өлкәлә уларҙың бай тәжрибәләре бар.

Бригадаға беркетелгән 22 эш атының бөтәһе лә яҡшы көрлектә, уларҙың һәр ҡайныһына көн һайын 8-әр килограмм бесән һәм 2-шәр килограмм һоло бирәбеҙ. Ә яҙғы баҫыу эштәре осоронда был норма арттырыласаҡ.

Беҙҙең бригада членлары уҙған йыл бойҙай сәселгән майҙандарҙың һәр гектарынан уртаса 21,4, арыштан — 16,7-шәр центнер урожай алғайнылар. Быйыл эске мөмкинлектәрҙе һәм урожайҙы арттырыу сығанаҡтарын ныҡлап иҫәпләгәс, бөтә сәсеү майҙандарында һәр гектарҙан уртаса 145-әр бот урожай алырға йөкләмә алып, ярышҡа сыҡтыҡ. Вәғәҙә намыҫ менән үтәләр. Бының өсөн бөтә шарттар бар.

М. Мостафин,
Мишкә районы Каганович исемендәге колхоздың баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры.

Совет государствоһының ҡеүәте

Эрәләтелгән «Үрнәк» колхозында хәҙер орлоҡ таҙартылып бөттө, инвентарҙар ремонтланды. Быйыл беҙ, һуғыштан һуңғы бөтә йылдарға ҡарағанда ла, юғарыраҡ урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ. Агротехника саралары планын уңышлы үтәнек.

Совет государствоһының бюджеты ул илебеҙҙең ҡеүәте, көсө һәм еңеүе тигән һүҙ. Империалистар үҙ илдәрендәге хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәленә һөжүм итәләр. Американың идара итеүсе реакцион түңәрәктары яңы һуғыш әҙерләйҙәр, хәрби расходтарҙы барған һайын арттыралар, аҙыҡ-түлек хаҡтары күтәрелә. Ә беҙҙең илебеҙҙә тормош көн һайын яҡшыра һәм күңеллерәк була. Бына ошо бәхетле тормош тураһында һөйләй Совет государствоһының бюджеты.

Беҙ Ватаныбыҙҙың ҡеүәте артһын һәм тормош бәхетле булһын өсөн көрәшәбеҙ. Тыныслыҡты яҡлау тураһындағы Закон ана шуны көҙәләндерә. «Үрнәк» колхозы членлары тыныслыҡты яҡлау тураһындағы Законды ҡайнар хупланылар. Быға яуап итеп хеҙмәттә яңы уңыштарға өлгәшергә һүҙ бирҙеләр. Эрәләтелгән колхозды ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу һәм күп тармаҡлы, бай хужалыҡ итеү — бына беҙҙең бөгөнгө бурысыбыҙ, — тиҙәр колхозсылар. Уларҙың фиҙакәр хеҙмәте тыныслыҡ эшен нығытыр, Совет государствоһының ҡеүәтен тағы ла күтәрер.

Н. Хөҙәйбирдин,
Мәсетле районы «Үрнәк» колхозы председателе.

КОЛЛЕКТИВ ЯРЫШҠА ҠУШЫЛДЫ

Бәләбәй ит комбинаты үткән йылда государствоға пландан тыш 563 бот ит, 313 бот май тапшырҙы. Комбинат коллективы 1951 йылда йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәргә социалистик йөкләмә алып, май алды ярышын киң йәйелдерҙе. Ул Воронеж ит комбинатын социалистик ярышҡа саҡырҙы.

И. Николаенко.



Республика хеҙмәтсәндәре май алды ярышына ҡушылып, юғары сифатлы продукция етештереү өсөн көрәшәләр.

Һүрәттә: Өфө күн-мамыҡ комбинаты туҡыусыһы иптәш Р. Зарипова эш өҫтөндә. Ул, алты станокты хеҙмәтләндереп, отлично сифатлы продукция етештерә.

Л. Яҡубов фотоһы.

Ужымдарҙың торошо яҡшы

Өфө районының колхоздарында ужым культуралары бөтә сәсеү майҙанының 26 процентын тәшкил итә. «Путь Ленина» һәм Хрущев исемендәге колхоздарҙа ғына 800 гектарҙан артыҡ арыш ужымы бар. Уларҙы һаҡлау өсөн ҡыш көндәрендә ҙур хәстәрлек күрелде.

Әле күптән түгел был ҙур майҙандың төрлө урынынан 12 проба алынып тикшерелде. Тикшереү һөҙөмтәһе ҡалын ҡар аҫтында ҡышлаған ужымдарҙың яҡшы һаҡланыуын күрһәтте.

Хәҙер был колхоздар ужымдарҙы яҙ өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн баҫыуҙарға серегән тиреҫ һәм ҡош тиҙәге ташыйҙар.

Юғары урожай өсөн көрәш

Бүздәк районы «Ҡыҙыл маяҡ» колхозы правлениеһе яҙғы сәсеүгә бөгөндән әҙер. Колхоз бөтә сәсеү майҙанына етерлек орлоҡтарҙы көҙҙән үк һалып ҡуйғайны. Хәҙер ул орлоҡтар таҙартылды, сәсеү кондицияһына еткерелде, орлоҡтарҙың сифаты һәм сығышы яҡшы.

Колхозсылар юғары урожай алыуҙы тәьмин итеү өсөн ҡышҡы агротехниканы киң ҡулландылар, бөтә сәсеү майҙандарына ҡар тотоу үткәрҙеләр, баҫыуға 6 мең йөк тиреҫ сығарылды.

Колхоз етәкселәре хәҙер баҫыуҙа яҙғы ҡар һыуҙарын тотоуҙы ойошторалар, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуға әҙерлек алып баралар.

Н. Дәүләтов.

Юғары урожай — тракторист хеҙмәтенә иң яҡшы баһа

Беҙҙең трактор бригадаһы уҙған йылда СССР Верховный Советы депутаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Алехиндең трактор бригадаһы менән ярышып эшләне һәм социалистик йөкләмәләрен намыҫ менән үтәне. Ильич исемендәге колхоздың баҫыусылыҡ бригадалары менән тәрән дуҫлыҡта эшләп, бөртөклө ашлыҡ һәм техник культураларҙың тотош майҙандарында һәр гектарҙан уртаса 15-әр центнер урожай үҫтереүгә өлгәштек. 15 ат көслө һәр тракторға 780-шәр гектар ер эшкәртелде, сезонға бөтәһе 1100 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһалды.

Ләкин машина-трактор паркын бөтә йыл буйына файҙаланып булманы. Бригада колхоздарҙа яҙғы сәсеүҙе һәм пар һөрөүҙе тамамлағас, бер ай эшләмәй торҙо. Быға колхоздарҙың ер майҙандарының етешмәүе сәбәп булды. Ерҙәр киҫәк-киҫәк һәм ваҡ ине. Хәҙер «Сулпан», «Комсомолец», «Пионер», Ильич һәм XVIII партсъезд исемендәге колхоздар берләшкәс, баҫыуҙар майҙаны киңәйҙе, беҙгә әлек файҙалана алмаған эске мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланырға яңы шарттар тыуҙы.

Ошо көндәрҙә беҙҙең бригада членлары Краснодар крайы Малороссийск МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең мөрәжәғәтен тағы бер тапҡыр өйрәнделәр, үҙҙәренең әлекке йылдарҙа файҙаланылмаған резервтарын иҫәпләнеләр һәм яңы күтәренке социалистик йөкләмәләр алдылар.

Беҙ 1951 йылда трактор бригадаһында хеҙмәтте сәғәт графигы нигеҙендә ойоштороп, һәр бер 15 ат көслө тракторға 1000-әр гектар ер эшкәртергә ҡарар иттек. Трактористар ике сменала эшләп, заданиеләрен систематик рәүештә арттырып үтәйәсәктәр. Тракторҙарҙың ремонт-ара сроктарын 500 гектарҙан 700 гектарға оҙонайтып, тракторҙар эшенең үҙенә төшөү хаҡын һәр бер гектарға 2 һум 20-шәр тингә арзанайтыуҙы, ремонт өсөн бүленгән средствоның 20 процентына экономия яһауҙы һәм тракторҙарҙы, тағылма инвентарҙарҙы һаҡлауҙы үҙ өҫтөбеҙгә алабыҙ. Бөтә трактор эштәрен иң яҡшы агротехник срогтарҙа, отлично сифатлы итеп башҡарып, ике аҙнаға бер көн экономия яһалған яғыулыҡ иҫәбенә эшләйәсәкбеҙ һәм үҙебеҙ хеҙмәтләндергән Ильич исемендәге эрәләтелгән колхоздың тотош сәсеү майҙандарының һәр гектарынан уртаса 140-ар бот урожай аласаҡбыҙ.

Йөкләмәне арттырып үтәргә тулы мөмкинлектәр бар. Бригадалағы ес «ДТ—54» маркалы трактор һәм тағылма инвентарҙар отлично сифатлы ремонтланды, автоматик заправка инвентарҙары менән тәьмин ителдек. Яҙғы осорға етерлек 1800 килограмм яғыулыҡ тупланыҡ. Колхоз председателе иптәш Бочкарев трактор бригадаһын хеҙмәтләндереү өсөн 10 колхозсыны беркетте. Улар уҙған йылдарҙа ла беҙҙең менән эшләгәйнеләр. Шуға күрә уларҙың эш тәжрибәләре бар.

Баҫыу эштәрен башлауға инде күп ваҡыт ҡалманы. 1951 йыл беҙгә тыныс ижади хеҙмәттә ҙур уңыш килтерер. Ул беҙҙең намыҫлы эшебеҙгә һәм йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәшеүебеҙгә бәйләнгән. Шуның өсөн беҙ республикабыҙҙағы трактор бригадаларын Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеев өлгөһендә эшләргә, машиналарҙы юғары етештереүсәнле эшләтергә, МТС-тағы резервтарҙы тулыһынса файҙаланырға, колхоз баҫыуҙарында юғары урожай үҫтерергә ярышырға саҡырабыҙ. Өйҙә, намыҫлы эшебеҙ аша яулап алынасаҡ юғары урожай хеҙмәтебеҙгә иң яҡшы баһа булһын!

Ф. Рябов,
Баҙан МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, БАССР Верховный Советы депутаты.

МТС колхоздарға булышлыҡ итә

Дмитриевка МТС-ы яҙғы сәсеүгә әҙерләнеү эшендә колхоздарға быйыл ҙур практик ярҙам күрһәтте. «ОС» маркалы орлоҡ таҙартҡыс машиналары менән бик күп колхоздарҙың орлоҡ материалдарын таҙартып бирҙе. Сталин һәм Каганович исемендәге эрәләтелгән колхоздарҙа 1436 центнер сәсеү орлоғо таҙартты. Шул уҡ Сталин исемендәге колхозға МТС автомашинаһы менән 37 тонна, Фрунзе һәм Жданов исемендәге колхоздарға 58, МТС үҙе хеҙмәтләндерә торған колхоздарға бөтәһе 160 тонна минераль ашламалар ташыны.

Ә. Әхтәмов.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Кадрҙарҙы тәрбиәләүгә иғтибарҙы көсәйтәйек!

Ҡандра район партия ойошмаһының V конференцияһында райком секретаре иптәш Зарипов отчет доклады менән сығыш яһаны.

— Районыбыҙҙың колхоздарында партия һәм хөкүмәттең ҙур ярҙам күрһәтеүҙәре һөҙөмтәһендә, — тине докладсы, — үткән йылда күп кенә колхоздар юғары урожай үҫтерә алдылар, ә «Безбожник», «Урняк» кеүек алдынғы колхоздар бөртөклө культураларҙан һәр гектарынан уртаса 14,5-әр центнер иген алыуға өлгәштеләр. Район государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда арттырып үтәне, һәм колхоздар тулыһынса сәсеү орлоҡтары менән тәьмин ителделәр.

Районыбыҙ колхоздары үткән йылда [illegible] планын арттырып үтәнеләр һәм 19 мең гектар ерҙе туңға һөрөп ҡалдырҙылар. Общественный малсылыкты үҫтереү планын да күпселек колхоздар арттырып үтәнеләр.

Ошо күрһәткес уңыштары менән бер рәттән, район партия ойошмаһының эшендә етди етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Райком һәм партияның тәүге ойошмалары [illegible].

Шулай уҡ район партия һәм совет ойошмалары ВКП(б) Үҙәк Комитетының һәм СССР Министрҙар Советының «Колхоздарҙа ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарҙы бөтөрөү саралары тураһында»ғы [illegible] «Яңы йондоҙ», «Игенсе», «Яҡты юл», «Ҡыҙыл йондоҙ» колхоздарында Уставты боҙоу ваҡиғалары булды һәм 1951 йылда башына колхоздарҙан 51 мең һум бурысҡа бирелгән аҡсалар [illegible].

Конференция, был етешһеҙлектәр райкомдың тәүге партия ойошмаларына [illegible] етәкселек итмәүе һәм хужалыҡ кампанияларын партия-политик эштәр менән бәйләп алып бармауы арҡаһында килеп тыуҙылар, тип билдәләне.

Районда идеология эше бик насар алып барыла. Шуға ҡарамаҫтан, иптәш Зарипов отчет докладында партия-политик эштең [illegible] ғына һөйләп үтте. [illegible] Пропаганда һәм агитация эшендә булған [illegible] етешһеҙлектәрҙе уратып үтте.

1950 — 1951 уҡыу йылында партия мәғарифе селтәрен комплектлау [illegible] райкомдың пропаганда һәм агитация бүлеге [illegible]. Транспорт конторы һәм Ҡандра МТС-ының партия ойошмаларында үткән йыл ВКП(б) тарихын өйрәнеү түңәрәген тамамлаған коммунистарҙы быйыл иптәш Сталиндың биографияһын өйрәнеү түңәрәктәренә беркеткәндәр. Марксизм-ленинизм теорияһын үҙ аллы өйрәнеүсе коммунистар [illegible]. Үткән йыл эсендә улар менән бер тапҡыр ҙа эш үткәрелмәгән. [illegible] бер тапҡыр ҙа консультация үткәреп өлгөрмәгәндәр.

Районда партия тарафынан расланған 32 лектор, 56 докладсы иҫәпләнә. Ләкин улар араһынан Әхмәтшин, Хәметуров, Газин, Хафизов, Аралбаев, Фафаров, Мозафаров иптәштәр тарафынан бер тапҡыр ҙа лекция һәм доклад уҡылмаған. [illegible]

Партия пропагандаһы һәм идеологик тәрбиә [illegible] Конференцияла сығыш яһаусы делегатҡа Асылгәрәев, Тәхфәтуллин, Ғабдуллин иптәштәр юғары күрһәткестәр [illegible].

[illegible] иптәш Ғабдуллин, — 350-нән артыҡ кеше эшләй. [illegible]

— Ҡандра МТС-ында, — тине иптәш [illegible]

Өрәләтеләгән «Трактор» колхозының председателе иптәш Асылгәрәев [illegible]:

— Былтыр колхоз малдарға етерлек [illegible]

Тәнҡит нигеҙендә тәрбиәләмәү, [illegible]

Конференция райкомдың яңы составын һайланы [illegible] секретаре итеп иптәш Зариповты һайланы.

F. Ғазизуллина.

Пропагандистәр семинары

Партия пропагандаһының идея һәм политик кимәлен артабан күтәреү пропагандистар менән эшләүҙе принципиаль юғарылыҡҡа күтәреп ойоштороуға бәйләнгән. Был юнәлештә пропагандистарҙың идея-политик йәһәттән әҙерлекле булыуҙарына ирешеү, уларҙың методик оҫталыҡтарын күтәреү пропагандистар менән эшләүҙә партия ойошмаларының төп һәм хәл иткес бурысы булып тора.

Белорет ҡалаһының партия ойошмалары быйыл партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙы үткән йылдарға ҡарағанда ойошҡан рәүештә, пропагандистарҙың яҡшы әҙерлекле булыуҙары менән башлап ебәрҙеләр. Пропагандистар уҡыу башланыр алдынан ҡала комитетының партия кабинете эргәһендә асылған ҡыҫҡа сроклы курс аша үткәрелделәр.

Партия мәғарифе селтәрендә ғәҙәттәге уҡыуҙар башланыу менән бергә, пропагандистарҙың даими семинарҙары эш башлап ебәрҙе. Хәҙерге көндә беҙҙең партия кабинетында пропагандистар өсөн хурт даими семинар эшләп килә, бынан тыш ВКП(б) тарихын үҙ аллына өйрәнеүселәргә консультация бирә торған махсус семинар эшләй. Был семинарҙар даими һәм пропагандистарҙың эш практикаһына ярашлы рәүештә планлы эш алып баралар. Уҡыуҙар башланғандан бирле пропагандистар өсөн унға яҡын, консультация тәртибендә алты тапҡыр семинарҙар үткәрелде.

Семинарҙарҙың эш нигеҙенә пропагандистар тарафынан марксизм-ленинизм классиктәренең әҫәрҙәрен үҙ аллына өйрәнеү тәртибе һалынды. Пропагандистар теге йәки был теоретик мәсьәлә буйынса занятиегә әҙерләнер алдынан ошо мәсьәлә тураһында партия кабинетында лекция тыңлайҙар. Семинарҙар эшләгән осорҙа пропагандистарға бөтәһе 15-кә яҡын лекция уҡылды. Мәҫәлән, беҙҙең пропагандистарыбыҙ «Совет халҡының партия етәкселеге аҫтында беҙҙең илдә социализм төҙөүҙә ирешкән еңеүҙәре», иптәш Сталиндең «Тағы ла бер тапҡыр беҙҙең партиялағы социал-демократик тайпылыш тураһында», «Ленинизм нигеҙҙәре тураһында» тигән хеҙмәттәре тураһында һәм «СССР һәм капитализм донъяһы» тигән һәм башҡа күп кенә темаларға лекциялар тыңланылар. Бындай лекциялар пропагандистарға яҡшы әҙерлекле, күргәҙмә пособиеларҙы байыраҡ файҙаланыу менән бирелгәләр.

Беҙ пропагандистар менән эшләүҙе артабан яҡшыртыу юнәлешендә серьез саралар күрәбеҙ. Быға тиклем пропагандистарҙың занятиегә тулы килеш йөрөмәүҙәре беҙҙең эшебеҙҙә серьез етешһеҙлектәрҙең береһе булып ҡала килде. Быға тиклем уларҙың занятиегә килеүҙәре 60 — 70 процент тәшкил итте. Урындағы партия ойошмалары аша эш алып барыу арҡаһында, һуңғы ваҡыттарҙа пропагандистарҙың занятиегә йөрөшө яҡшырҙы. Семинарҙар күпселек пропагандистарҙың актив ҡатнашлыҡ итеүҙәре менән үткәреләләр.

Хәҙер семинарҙарҙа айырым теоретик мәсьәләләр буйынса рефераттар һәм докладтар яҙыу, практик сығыштар яһау киң урын алып тора.

F. Сиражетдинов,
ВКП(б)-ның Белорет ҡала комитеты лекторы.

Техниканы тулы ҡеүәтендә эшләтеү өсөн

Социалистик промышленность яҡшы техника менән ҡоралландырылған. Халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында ла күп хеҙмәт талап итеүсе процестарҙы механизациялаштырыу һәм автоматлаштырыу тормошҡа ашырылған. Металлургия, күмер, нефть промышленностары һәм промышленностең башҡа тармаҡтары Ватаныбыҙҙың гүзәл техникаһы менән ҡоралландырылғандар. Һуңғы йылдарҙа урман промышленносы бик күп һанда механизмдар алды. Был, ағас әҙерләүҙе лә һәм ташыуҙы ла механизациялаштырырға мөмкинлек бирә. Беҙҙең ауыл хужалығыбыҙ ҙа бай техника менән тәьмин ителгән. Биш йыллыҡ йылдарында беҙҙә техникаға тамам эйә булған гүзәл кадрҙар ҙа үҫеп сыҡтылар. Быларҙың бөтәһе лә обществоның етештереү көстәрен үҫтереү өсөн, социалистик производствоны күтәреү өсөн хәл иткес шарт булып торалар.

Беҙҙең промышленносебеҙ һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ заданиеларын уңышлы үтәне. Промышленность продукцияһын етештереүҙе биш йыллыҡ план менән 1950 йылда, 1940 йылға ҡарағанда, 48 процентҡа арттырыу күҙҙә тотолғайны. Фактик алғанда был задание байтаҡ арттырып үтәлде. Металл етештереү, күмер һәм нефть сығарыу артты, машиналар төҙөү йылдам темптар менән үҫә. Яңы техниканы индереү хеҙмәт етештереүсәнлеген 40 процентҡа күтәрергә мөмкинлек бирҙе. Биш йыллыҡ йомғаҡтары бына ошондай. Ләкин был уңыштар совет кешеләрен тынысландырып ҡалдырмайҙар, ә, киреһенсә, тағы ла яҡшыраҡ, тағы ла етештереүсәнлеклерәк эшләргә ынтылыш тыуҙыралар.

Предприятиеларҙа социалистик ярыш яңы көс менән йәйелдерелә, уның формалары төрләндерелә. Хәҙер Уралдағы ауыр машиналар төҙөү заводы һәм Магнитогорск металлургия комбинаты работниктәренең инициативаһы менән техниканы яҡшыраҡ файҙаланыу өсөн көрәш йәйелдерелде. Был хәрәкәт халыҡ хужалығы өсөн ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Булған техниканы яҡшыраҡ файҙаланыу арҡаһында, оборудованиелар һатып алыуға өҫтәмә аҡса тотмайынса, продукция етештереүҙе байтаҡ арттырырға мөмкин. Шуға күрә Урал эшселәре башланғысының промышленностең бөтә тармаҡтарында ла иң ҡайнар яҡлауҙы табыуы осраҡлы хәл түгел.

Техниканы яҡшыраҡ файҙаланыу өсөн ярышҡа ҡушылып, республиканың күп кенә промышленность предприятиеларының коллективтары үҙҙәренә яңы социалистик йөкләмәләр алдылар. Белорет металлургия заводында былтыр сталевар иптәш Зимин мартен мейесенең юғары етештереүсәнлегенә өлгәште, ул мейес төбөнөң һәр бер квадрат метрынан 6,11 тонна ҡорос алды. Алдынғы сталеварҙар был күрһәткесте арттырырға ҡарар иттеләр. Сталевар иптәш Иноземцев мейес төбөнөң һәр бер квадрат метрынан ҡорос алыуҙы 6,5 тоннаға, сталевар иптәш Симонов — 6,9 тоннаға тиклем арттырырға йөкләмә алды. Шулай уҡ Өфө нефть эшкәртеү заводында, Октябрьский һәм Ишембай нефть промыслаларында яңы социалистик йөкләмәләр алынды.

Техниканы файҙаланыу — теге йәки был предприятие эшен бөтә яҡлап характерлаусы күрһәткес ул. Бынан бөтә башҡа мәғлүмәттәр — хеҙмәт етештереүсәнлеге, изделиеларҙың үҙенә төшөү хаҡы һәм башҡалар алына. Техниканы юғары етештереүсәнлекле файҙаланыуға өлгәшеү — ул хосуси эш түгел, ә государство әһәмиәтендәге ҙур бурыс. Шик юҡ, Башҡортостан промышленносының работниктәре был мөһим эштә башҡаларҙан артта ҡалмаҫтар. Уларҙың быны өсөн бөтә шарттары, тәрән өйрәнелергә һәм бөтә предприятиеларҙың ҡаҙаныш ителәргә тейешле булған гүзәл миҫалдар бар. Өфө, Октябрьский, Черниковск ҡалаларының һәм башҡа промышленность үҙәктәренең партия һәм профсоюз ойошмалары ҙур эш башҡарырға тейештәр.

Өфө нефть эшкәртеү заводында хәрәкәт итеүсе оборудованиеның етештереүсәнлеген арттырыу өсөн серьез эш алып барыла. Техниканы камиллаштырыу һөҙөмтәһендә заводта установкаларҙың етештереүсәнлеге күтәрелгән; был юнәлештә әҙерләү цехында айырыуса ҙур саралар үткәрелгән; технология цехтарында оборудованиеларҙың эш циклы *байтаҡ арттырылған*, уның иҫәбенә байтаҡ һанда өҫтәмә бензин алынған. Октябрьскийҙың бораулау мастерҙары *Беляндинов*, *Балабанов*, Агапов һәм башҡа күп кенә иптәштәр юғары күрһәткестәргә өлгәштеләр. Улар скважиналарҙы юғары тиҙлектә эшләтәләр, станоктарҙың юғары етештереүсәнлегенә һәм проходканың үҙенә төшөү хаҡының арзанайыуына өлгәшәләр.

Оборудованиеларҙы юғары етештереүсәнлекле файҙаланыуҙың алдынғы тәжрибәһе был көрәштен, әгәр ҙә уға инженер-техник работниктар етәкселек иткән ваҡытта, уңышлы була алыуын күрһәтә. Инженерҙар, техниктар, мастерҙар был ярыштың йәне булырға, эшселәргә-рационализаторҙарға үҙ ваҡытында ярҙам күрһәтергә, техник уҡыу, эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыуҙы ойоштороға тейештәр. Өфө нефть эшкәртеү заводының коллективы быға миҫал булып хеҙмәт итә ала. Бында рационализаторҙар менән даими эш алып барыла, кадрҙарҙың квалификацияһын күтәреү систематик үткәрелә, күп кенә эшселәр производствонан китмәйенсә киске техникумдарҙа һәм башҡа уҡыу йорттарында уҡыйҙар.

Ләкин техниканы файҙаланыу быға ғына бәйләнмәгән әле. Ул бөтә [illegible] ҙың берҙәм эшләүенә, производ[illegible] дөйөм ритмына бәйләнгән. Оборудование[illegible] ларҙы тигеҙ файҙаланмау, сырь[illegible] ваҡытында тәьмин итмәү, шт[illegible] на предприятиеларҙа сыҙап т[illegible] ул. Улар техниканың етештер[illegible] төшөрәләр. Үкенескә ҡаршы, б[illegible] һеҙлек тулыһынса бөтөрөлмәгән [illegible] рудованиеларҙы яҡшыраҡ ф[illegible] өсөн ярышҡа ҡушылып, ош[illegible] һеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн ты[illegible] башларға кәрәк. Ай башына [illegible] тулы ҡеүәтендә эшләмәүҙәренә [illegible] йырға ярамай. Штурмовщина[illegible] рәү — промышленностең ғәй[illegible] зервтәрен хәрәкәткә килтереү т[illegible]

Нефть промышленносында те[illegible] файҙаланыуҙа ҙур етешһеҙлек[illegible] Айырым бораулау бригадаларын[illegible] тереүсәнлегә юғары булыуға ҡар[illegible] бында улар эшендә тигеҙлеккә [illegible] маған әле. Бригадаларҙа буш т[illegible] ҡиғалары була. Бер буровойҙа [illegible] запрапан һун бригадалар яңы об[illegible] әҙер булмауы арҡаһында бер [illegible] буйына бер нәмә лә эшләмәйҙ[illegible] итеп түбәндәге фактты алырға [illegible] Октябрьскийҙағы иң яҡшы мастер[illegible] Беляндинов бригадаһы былтыр 1[illegible] буш торҙо. Ул был ваҡыт эсендә [illegible] ҙур эш башҡара алыр һәм госуд[illegible] бик күп файҙа килтерә алыр ине.

СССР Верховный Советының [illegible] ғел булып үткән сессияһында СС[illegible] финанс министры иптәш Зверев [illegible] промышленносында техниканы [illegible] ләнмәҫлек файҙаланыуҙы айырыу[illegible] ҙалап үтте. Был иҫкәртеү беҙҙең ре[illegible] ликабыҙҙың ағас әҙерләүсе предпри[illegible] ләренә бигерәк тә ныҡ ҡағыла. Баш[illegible] тостандың урман промышленносе [illegible] механизация юлы менән әҙерләг[illegible] шыу заданиеларын үтәмәй. Электр [illegible] лары насар файҙаланыла, тракторҙар [illegible] башҡа машиналар буш торалар. [illegible] ҙың бөтәһе лә леспромхоз директор[illegible] ның, министерство инженер-техник [illegible] никтәренең техникаға, кадрҙарҙ[illegible] низаторҙарҙы өйрәтеүгә тейешле [illegible] бирмәүҙәрен күрһәтә.

Фактар промышленностең [illegible] тармаҡтарында техниканың те[illegible] файҙаланылмауын күрһәтәләр. Шуға [illegible] техниканы яҡшыраҡ файҙаланы[illegible] ярыш байрағын күтәреп сыҡҡа[illegible] эшселәренең инициативаһы беҙҙә [illegible] айырыуса ҡиммәтле. Был ярышты [illegible] изводствоның бөтә тармаҡтарын [illegible] участкаларын да солғап алыуы[illegible] шергә кәрәк. Социалистик пром[illegible] ность алдында 1951 йылда ҙур бур[illegible] тора. Уларҙы үтәү өсөн беҙ бөтә р[illegible] тәрҙе лә хәрәкәткә килтерергә бурыслы[illegible]

Г. Мин[illegible]

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Борай МТС-нда ашыҡмайҙар"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 6 ғинуар номерендә Борай машина-трактор станцияһында тракторҙарҙы һәм ауыл хужалығы машиналарын ремонтлау планының өҙөлөүе тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Борай район комитете редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Борай МТС-ында ашыҡмайҙар» тигән исемдә «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған хәбәр тикшерелеп, унда күрһәтелгән етешһеҙлектәр дөрөҫ тип табылды. Газетала күрһәтелгән фактар МТС партия ойошмаһының [illegible] лышында ҡаралып, етешһеҙлектәр[illegible] төрөү саралары билдәләнде. Трактор[illegible] һәм ауыл хужалығы машиналары[illegible] монтлауҙы тиҙ тамамлауға өлгәшеү [illegible] практик эш алып барыла».

Яҙғы баҫыу эштәрендә МТС-тарҙың эске резервтәрен тулыһынса файҙаланырға

Башҡортостан ауыл хужалығы ҡарамағында бик күп ҡеүәтле техника бар. Ләкин республикабыҙ МТС-тары бына был бай техниканы ғәйәт насар файҙаланалар әле.

Республика МТС-тары үҙған йыл трактор эштәре планын бик мөһим эш төрҙәре буйынса үтәп еткермәнеләр. Ҡара пар һөрөү, мал аҙығы силослау, бесән сабыу, пропаш культураларҙы культивациялау эштәре планын үтәү айырыуса насар булды. План ни бары 21—29 процентҡа ғына үтәлде. Республиканың күп кенә МТС-тары баҫыу эштәрен билдәләнелгән агротехник сроктарҙа һәм колхоздар менән төҙөшкән договорҙарында күҙҙә тотолған сроктарҙа үтәмәнеләр.

Архангель МТС-ында (директоры иптәш Акчурин) трактор эштәре планы 85 процентҡа үтәлеп, һәр бер шартлы тракторға планда ҡаралған 313 гектар урынына 287 гектар ғына ер эшкәртелде һәм һәр бер гектарҙан 5,4 центнер урожай алынып еткерелмәне. Яҙғы осорҙа был МТС-та һәр бер шартлы трактор сменаға, 3,6 гектар урынына, 1,7 гектар ғына ер эшкәртте. Былар бөтәһе лә машиналарҙың етештереүсәнлеген күтәреү резервтәренең файҙаланылмауы, машина-трактор паркын хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу өсөн бер ниндәй ҙә саралар күрелмәүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде.

Алдынғы машина-трактор станцияларының һәм механизаторҙарҙың эш тәжрибәләре һәр бер МТС-та машиналарҙың етештереүсәнлеген күтәреүҙең, баҫыу эштәренең сифатын яҡшыртыуҙың һәм сроктарын кәметеүҙең ғәйәт ҙур резервтәре булыуын күрһәтәләр. Төп бурыс хәҙер был резервтәрҙе асыҡлауҙан һәм уларҙы ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын бөтә яҡлап күтәреү һәм общественный малсылыҡты артабан үҫтереү өсөн оҫта файҙаланыуҙан тора.

Трактор бригадаһын бөтә яҡлап ныҡытыу, уның материаль-техник байыҡтырылыуы, трактор бригадаһы члендәренең составын дөрөҫ һайлап алыу һәм ауыл хужалығы эштәренең бөтә осоронда уны даими һаҡлау МТС-тарҙың машина-трактор паркының етештереүсәнлеген күтәреүҙең хәл иткес шарттарының береһе булып тора. Баҫыу эштәре осоронда трактор бригадалары өсөн ошондай шарттар тыуҙырырға кәрәк, трактористар һәм трактор бригадаларының башҡа работниктәре смена тамамланғас, ял итеү өсөн ауылдарға китергә түгел, ә бригада станында ҡалып нормаль шарттарҙа ял итергә тейештәр. Баған МТС-ының Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Рябов тарафынан етәкселек ителгән бригаданың эш тәжрибәһе буйынса һәр бер трактор бригадаһын яҡшы йыһазландырылған ҙур ғына ике вагончик менән тәьмин итергә кәрәк. Вагончиктарҙың береһен торлаҡ өсөн һәм икенсеһен трактористарҙың культуралы ял өсөн файҙаланырға, уны бригада библиотечкаһы, музыка инструменттары, радиоприемник, патефон һәм башҡалар менән йыһазландырырға кәрәк. Трактор бригадаларында шулай уҡ яҡшы общественный туҡланыу ойоштороу талап ителә. Бындай шарттарҙа яҡшы ял иткән тракторист эшләп сығарыуҙың смена нормаларын тулыһынса һәм арттырып үтәүҙе тәьмин итә аласаҡ.

Беҙҙең республикала ауыл хужалығы производствоһының хәҙерге заманның ҡатмарлы машина техникаһына тулыһынса эйә булған бик күп мастерҙары үҫеп сыҡты. Механизаторҙарҙың байтағы хеҙмәт уңыштары өсөн орденлар һәм медалдар менән наградланды, техниканы файҙаланыуҙа яҡшы өлгөләр күрһәткән өсөн күп кенә механизаторҙарға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Башҡортостан халҡы алдынғы механизаторҙары СССР, РСФСР һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советтарына депутат итеп һайланы. МТС етәкселәренең бурысы — бөтә тракторсистарҙы лә, трактор бригадаларының бригадирҙарын, комбайнерҙарҙы алдынғылар кимәленә күтәреүҙән тора. Һүҙ ҡатмарлы ауыл хужалығы техникаһын квалификациялы файҙаланыу тураһында бара. Был айҡанлы Стәрлетамаҡ районы Михайловка МТС-ының өлгөһө буйынса бөтә трактористар, бригадирҙар, прицепщиктар, учетчиктар-заправщиктар һәм башҡа работниктар менән, баҫыу эштәре башланғанға тиклем, квалификацияны күтәреү буйынса ҡыҫҡа сроклы курстар үткәрергә, уларҙа машиналарҙы юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланыуҙың төп алымдарын өйрәнергә кәрәк.

Ваҡ колхоздарҙы эреләтеү буйынса үткәрелгән эш ауыл хужалығы производствоһын бөтә яҡлап механизациялаштырыу өсөн, машина-трактор станцияларының бай техникаһын юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланыу өсөн иң уңғай шарттарҙы тыуҙырҙы.

Эш тәжрибәһе ваҡ колхоздарҙың социалистик ауыл хужалығын киң күләмдә үҫтереүгә тулы мөмкинлек бирмәүен күрһәтте. Эреләтелгән колхоздар машина техникаһын юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланыуға киң юл асалар.

Буздәк районының машина-трактор станциялары 1950 йылда «Сулпан», «Сатра», «Нур», «Яҡты» колхоздарын хеҙмәтләндерҙеләр. Был колхоздарҙа файҙалана торған ер майҙаны 235—475 гектар, баҫыуҙың уртаса күләме 14,9—29,8 гектар тәшкил итә. Загондың оҙонлоғо 200—450 метр булған. Әлбиттә, баҫыуҙарҙың бындай күләмендә машиналарҙы юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланыу тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Сөнки, беренсенән, МТС был ваҡытта бер трактор бригадаһы менән 2—3 колхозды хеҙмәтләндерергә мәжбүр була ине, ә был агрегаттарҙы техник хеҙмәтләндереүҙе ҡыйынлаштыра һәм техник төҙәк булмауҙары арҡаһында простойҙарҙың артыуына килтерә торғайны. Икенсенән, ваҡ колхоздарҙа механизаторҙар кадрҙарын һайлап алыу һәм һаҡлау ҡыйыныраҡ була һәм, өсөнсөнән, 200—450 метр оҙонлоғондағы загондарҙа эшләгән ваҡытта тәгәрмәсле тракторҙар боролоу өсөн смена ваҡытының 18—30 процентен, ә гусеницалы тракторҙар 18—32 процентен юғалта торғайнылар. Шул уҡ ваҡытта 1000—2500 метр оҙонлоғондағы загондарҙа эшләгән ваҡытта боролоу өсөн ваҡыт бик аҙ китә.

Шулай итеп, машиналарҙың эффектлы файҙаланылыуына тик ҙур ер участкалары булған колхоздарҙа ғына, йәғни эреләтелгән колхоздарҙа ғына өлгәшергә мөмкин. Бурыс—ер массивтарын тиҙерәк ҡушыуҙан һәм эреләтелгән колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәренең беренсе көндәренән үк тракторҙарҙы ҙур загондарҙа эшләтә башлауҙан тора.

Һәр бер МТС-та машиналарҙы баҫыу эштәренә үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп әҙерләү 1951 йылғы планды уңышлы үтәүҙең һәм машина-трактор паркының етештереүсәнлеген күтәреүҙең мөһим шарты булып тора.

Машина-трактор паркын ремонтлау планын юғары сифатлы итеп һәм срогынан алда үтәү өсөн республикала социалистик ярыш инициаторы Ново-Троицк МТС-ы механизаторҙары тупраҡ эшкәртеүсе машиналарҙы ремонтлауҙы срогынан бик күп алда тамамланылар. Ремонтланған машиналарҙың сифаты яҡшы. Ново-Троицк МТС-ының механизаторҙары бөтә тракторҙарҙы ла электр яҡтылығы менән тәьмин иттеләр. Ремонттың яҡшы сифатлы булыуы техник төҙәк булмауҙар арҡаһында простойҙарҙы бөтөрергә, бынан тыш тракторҙарҙы электр яҡтылығы менән тәьмин итеү механизмдарҙы тәүлек әйләнәһенә файҙаланыуға мөмкинлек бирәсәк. Был машина-трактор паркының етештереүсәнлеген күтәрәсәк.

Механизаторҙар техниканы яҡшыраҡ файҙалана алһындар өсөн МТС етәкселәре һәр бер трактор бригадаһын бөтә кәрәкле оборудование менән тәьмин итергә бурыслылар. Күсмә мастерскойҙарҙы тулы әҙерлеккә килтерергә һәм уларҙы белеп файҙаланыуҙы ойошторорға кәрәк.

Дәүләкән күргәҙмә-терәк МТС-ында тағылма машиналарҙы дөрөҫ һайлап алыуға ҙур иғтибар бирелә. Был МТС-тың трактор бригадаларында бөтә төр ауыл хужалығы эштәре өсөн агрегаттар ентекле рәүештә һайлап алыналар. Комплектлы агрегаттар киң ҡулланылалар, улар бер үк ваҡытта бер нисә төр ауыл хужалығы эшен башҡарырға мөмкинлек бирәләр.

Һәр бер секундҡа экономия яһау өсөн көрәшеп, МТС етәкселәре бөтә трактор бригадаларын тракторҙарға бураҙнала заправка яһау өсөн механизацияланған заправка арбалары менән тәьмин иткәндәр.

Машина-трактор станцияларының сәғәт графигы менән эшләүҙәрен ойоштороу хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә хәл иткес шарт булып тора.

Сәғәт графигы менән эшләй башлағас, Дәүләкән күргәҙмә-терәк МТС-ының Социалистик Хеҙмәт Геройы Тихон Алехин бригадаһы үҙе хеҙмәтләндергән колхозда яҙғы сәсеүҙе һәм бөтә сәсеү алды эштәрен 36 сәғәт эсендә, ә иптәш Лапонов бригадаһы 44 сәғәт эсендә тамамланы. Сәғәт графигы менән эшләгән трактористар, комбайнерҙар, машинистарҙың алдынғы эш тәжрибәләре быйыл бөтә трактор бригадаларына күсерелергә тейеш. Сәғәт графигын индереү МТС-тағы эште ойоштороуҙы яҡшыртыуҙы, етәкселек итеү культураһын күтәреүҙе талап итә. Тракторҙарҙың сәғәт графигы менән эшләүе эшләп сығарыу нормаларын байтаҡ арттырыуҙы тәьмин итәсәк.

Республика механизаторҙары араһында трактор паркының юғары етештереүсәнлеге, МТС резервтәрен тулыһынса файҙаланыу өсөн ярыш йәйелдерелә. Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең гүзәл башланғысына яуап итеп, республикабыҙҙың трактор бригадалары һәм айырым тракторсистары үҙҙәренә күтәренке йөкләмә алалар.

Базан МТС-ының трактор бригад[illegible] бригадиры Социалистик Хеҙмәт Гер[illegible] Федор Рябов, Ново-Троицк МТС-ы[illegible] трактор бригадаһы бригадиры Плетн[illegible] Ҡыйғы МТС-ының трактор бригада[illegible] бригадиры Хәкимьянов, Усть-Икин МТС-[illegible] ның трактор бригадаһы бригадиры [illegible] иптәштәр һәм башҡа МТС-тарҙың ме[illegible] заторҙары үҙҙәренә күтәренке соц[illegible] тик йөкләмәләр алдылар.

Шишмә МТС-ының алдынғы т[illegible] ристкаһы иптәш Ниғмәтуллина «С[illegible] тракторында 3000 гектар ер эшкәрт[illegible] һәр бер гектарҙы эшкәртеүҙең үҙ[illegible] шөү хаҡын бер һум 50 тингә [illegible] тырға, тотош майҙанда һәр бер гект[illegible] 19-ар центнер урожай алыуға һү[illegible]

Алдынғыларҙың йөкләмәләренә [illegible] характерлы булып тора, машина[illegible] юғары етештереүсәнлекле файҙалан[illegible] йөкләмә алыу менән бер рәттән, ул[illegible] лай уҡ средстволарға экономия [illegible] һәр бер гектарҙы эшкәртеүҙең үҙ[illegible] шөү хаҡын кәметергә, юғары у[illegible] алырға, техник һәм агрономик бел[illegible] күтәрергә һүҙ бирәләр.

Социалистик йөкләмәләрҙәге бы[illegible] элементтарҙы республиканың бөтә м[illegible] заторҙары ла күтәреп алырға те[illegible] Улар МТС-тарҙың резервтәрен ту[illegible] файҙаланырға мөмкинлек бирәсәктәр[illegible] шиналарҙы юғары етештереүсәнлек[illegible] ҙаланыуға, ағыулыҡҡа һәм аҡса [illegible] стволарына байтаҡ экономия яһау[illegible] терәсәктәр.

Социалистик ауыл хужалығы [illegible] ҙур һәм яуаплы бурыстар тора. [illegible] МТС-тар тарафынан өлгәшелгән у[illegible] ға таянып, баҫыуҙарҙың урожай[illegible] сәнлеген артабан күтәрергә кәрәк. [illegible] торҙарҙы һәм башҡа машиналарҙы [illegible] файҙаланыу, МТС-тарҙың бөтә резер[illegible] мобилизациялау, средстволарға һәм [illegible] риалдарға экономия яһау һәр бер [illegible] тарафынан государство заданиеһы[illegible] үтәүҙең мөһим шарты булып тора.

В. Прост[illegible]
БАССР Ауыл хужалығы мини[illegible] стволының баш инженеры.

Нефть промышленносендә артабан яңы еңеүҙәр өсөн

Октябрьский ҡалаһында нефтселәрҙең балалары өсөн музыка мәктәбе асылды.

Һүрәттә: Фортепиано класында занятие үткәреү. Занятиене преподаватель А. Чижова алып бара.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Рационализаторҙарҙың яңы методтары

Большевиктар партияһы һәм иптәш Сталин юлбашсылығында Башҡортостан нефтселәре йылдан-йыл яңы уңыштарға өлгәшәләр. Улар нефть техникаһын үҙләштереүҙә һәм хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуҙа яңы методтар ҡулланалар.

Күптән түгел Башҡортостанда турбин ысулы менән бораулау бик аҙ ине әле. Ул тик Ишембайҙа ғына ҡулланыла ине. Ә хәҙер бындай ысул республиканың бөтә бораулау контораларында ла киң ҡулланыла, һәм иң көслө ҡорал булып тора.

«Туймазынефть» тресында социалистик ярыш алдынғылары, мастерҙар Куприянов, Белянчинов иптәштәр тиҙләтелгән режимда бораулай башланылар. Тиҙләтелгән режимда бораулау проходка тиҙлеген бик ныҡ арттыра. 1949 йылда тиҙләтелгән режимда бөтәһе өс бригада эшләй ине. Бораулау тиҙлеге станок-айға 700-800 метрға етте. Ә 1950 йылда ул 1 мең метрға тиклем артты. Бөтәһе унда һигеҙ бригада эшләне. Тиҙләтелгән режим менән киләсәктә лә бораулау өсөн бик тәрән һәм күп көс һалып эшләү талап ителә әле.

1950 йылда парафинға ҡаршы көрәш етди урын алды. Фонтанлы скважиналар өсөн үҙгәреп тороусы диаметрлы, ә тәрән насослы скважиналар өсөн пластинкалы ҡырғыстар индерелде. Фигуралы һәм пластинкалы ҡырғыстар скважиналарҙың ремонт-ара эшләү срогын оҙайтыуға мөмкинлек бирәләр.

Нефть промышленносендә яңы техниканы үҙләштереү һәм камилләштереү, шулай уҡ инженер Ковалев методын производствола ҡулланыу коллективтең рационализаторлыҡ тәҡдимдәр индереүе менән бәйләнгән. Үткән йыл «Туймазынефть» тресында яһалған бөтәһе 700 рационализаторлыҡ тәҡдимдең 300-ҙән артығырағы производствоға индерелде. Был — государствоға 1,5 миллион һумлыҡ средствола экономия яһауға мөмкинлек бирҙе.

Р. Сәйфетдинов,

ВКП(б) Өлкә Комитетенең нефть промышленносе бүлеге инструкторы.

Башҡорт АССР-ы нефтселәре СССР Министрҙәр Советы Председателе Иосиф Виссарионович Сталингә хат яҙҙылар.

«Беҙ, — тиҙәләр улар, — продукция эшләп сығарыуҙы артабан арттырыу һәм капиталь төҙөлөш планын үтәү өсөн булған резервтарҙы тулыһынса файҙаланыуҙы 1951 йылдың иң мөһим бурыстарының береһе, тип иҫәпләйбеҙ.

Беҙ 1951 йылда планды һан яғынан үтәү менән бергә, шулай уҡ яңы совет техникаһын тулыһынса файҙаланыуҙы төп бурыс итеп ҡуйабыҙ. Ошо нигеҙҙә беҙ промышленность предприятиелары һәм төҙөлөш ойошмалары эшенең техник-экономик күрһәткестәрен яҡшыртыуға өлгәшәсәкбеҙ».

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының бөгөнгө номерында нефтселәрҙең фиҙакәр хеҙмәте тураһында редакцияға килгән ҡайһы бер хаттарҙы урынлаштырҙыҡ.

Техниканы тулыһынса файҙаланыу өсөн көрәшәбеҙ

Беҙҙе, совет нефтселәрен, Тыуған ил хәҙерге заман техникаһының беренсе класлы машиналары һәм механизмдары менән ҡоралландыра. Был техниканы тулыһынса файҙаланыу, уның эшләү срогын оҙайтыу өсөн көрәш — беҙҙең изге бурыстарыбыҙҙың береһе.

Беҙҙең участка тик һуңғы ваҡытта ғына бик күп яңы типтағы һәм маркалағы машиналар алды. Шул иҫәптән, скважиналар ҡеүәтле станок-качалкалар, редукторлы насостар һәм электр лебедкалары менән йыһазландырылды. Былар беҙгә скважиналарҙы эксплуатациялауҙа дөрөҫ режим булдырырға, производство культураһын күтәрергә ярҙам итте.

Яңы машиналар ҡулланыу, инженер Кафаров өлгөһөндә эшләү һөҙөмтәһендә, беҙҙең коллектив үҙған йылда байтаҡ ҡына уңыштарға өлгәште. Скважиналарҙың ремонт-ара эшләү ваҡыты 3-4, хатта 6 тапҡырға тиклем артты, 72 мең һумлыҡ материалға экономия яһалды, пландан тыш меңдәрсә тонна нефть бирелде.

Ләкин был, оборудованиене беҙ тулы көсөнә файҙаландыҡ, тигән һүҙ түгел әле. Станок-качалкаларҙың торбалары тиҙ парафинлана. Шул арҡала уларҙың массив кривошиптары ватыла, шатундары бөгөлә, редукторҙары боҙола ине. Хәҙер парафинға ҡаршы камиллаштерелгән эффектлы ысулдар табылды. Һөҙөмтәлә качалкаларҙың ватылыу ваҡиғалары бик һирәгәйҙе. Улар нормаль эшләй башланылар.

Хәҙер социалистик ярыш яңы көс менән йәйелдерелде. Магнитогорск домнасыларының гүзәл инициативаһы беҙҙең коллективта хуплау тапты. Участкала оборудованиелар социалистик һаҡлыҡҡа алындылар. Операторҙар машиналарҙы, станок-качалкаларҙы әленән-әле тикшереп торалар һәм уларға ваҡытында профилактик саралар үткәрәләр.

Һөҙөмтәлә станоктар һәм агрегаттар боҙолмайҙар.

Ш. Мөхәмәтшин,

«Туймазынефть» тресы 1-се номерлы промыселының 3-сө участка мастеры.

Төҙөүсе ғорурлығы

Ҡала төҙөүсе! Ниндәй ғорур яңғырай. Төҙөүселәр килгәндә әле буш ялан була. Ә бер ни тиклем ваҡыт үтеү менән ҡараһаң, бина үҫеп сыҡҡан. Уға эшселәр күсеп киләләр. Тәҙрәләрендә уттар балҡыйҙар. Йөрәк шаберәк тибә башлай. Күңелгә сикһеҙ шатлыҡ тула.

Ҡайһы бер саҡта яңы йәшәүселәр янына инеп: «Йә, нисек, оҡшаймы?» тип һорайһың. Һинең эшеңдән ҡәнәғәт булһалар, нисек ғорурланаһың!

Яратам мин үҙ профессиямды: маляр. Ташсылар һалған, штукатурҙар һылаған өйҙө биҙәйем, матурлайым. Минән һуң, өй әҙер була.

Мин етәкселек иткән малярҙар бригаһы 4 йыл эсендә 50-нән артыҡ ике ҡатлы өйгә малярлыҡ эше үткәрҙе. Был кескәй генә урам, тигән һүҙ.

Хәҙер мин Поматау санаторийында ял итәм, ҡаланы тағы ла матурыраҡ, гүзәлерәк итеү өсөн көс йыям. Һәм беҙ, төҙөүселәр, Октябрьскийҙы Сталин эпохаһының иң матур ҡалаларының береһе итәсәкбеҙ.

М. Заһитов,

2-се номерлы төҙөлөш управлениеһының маляры.

Аварияһыҙ эшләйбеҙ

Мин иптәш Ҡасим Белянчинов бригадаһында слесарь булып эшләйем. Слесарь бригада составына инмәй. Шуға ҡарамаҫтан, бригаданың нисек эшләүе уға бик ныҡ бәйләнгән. Сөнки бораулау оборудованиеһенең ритмлы һәм аварияһыҙ эшләүе өсөн, иң тәүҙә, слесарь яуаплы.

Бына шуға күрә бригада һәм слесарь ҡулға-ҡул тотоношоп эшләй һәм яңынан-яңы уңыштарға өлгәшә.

Мин вахтаға килеү менән механизмдарҙың нисек эшләүе тураһында һорашам, насостарҙағы май кимәлен тикшерәм. Әгәр ҙә бораулау бара икән, ул ваҡытта машиналарҙың нисек эшләүен тыңлайым һәм һиҙелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн сара күрәм. Буровойға килеп лебедкаларҙы ҡарайым. Ә бораулау барғанда, уларҙы иркенләп тикшерергә иң уңайлы саҡ. Подшипниктарҙың, кронштейндарҙың шығыртылыу урындарына, ротор һәм редукторҙа май барлығына ла күҙ һалам. Насостарға талап ителгән ремонтта күтәреү-төшөрөү операцияһы ваҡытында үткәрәм.

Бынан тыш, 10 көнгә бер тапҡыр профилактика ремонты үткәрелә. Бораулау эше 1-2 сәғәткә туҡталып тора. Слесарь һәм вахтала эшләүселәр бөтә оборудованиеға ентекле тикшереү һәм майлау үткәрәләр.

Мин айырыуса майҙың таҙа булыуына иғтибар бирәм һәм майлау эшен тик үҙем генә башҡарам.

Оборудованиеларҙы иғтибарлы тәрбиәләү бик яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Оборудованиеларҙы ремонтлау 477-се буровойҙа 9, 635-се буровойҙа 6, 478-се буровойҙа 4,5 сәғәт кенә ваҡытты алды. Ә план буйынса был эшкә ваҡыт 6 — 7 тапҡыр күберәк бирелә.

Бынан тыш, оборудованиеның эшләү срогы оҙая. Бер комплект бораулау оборудованиеһы менән ремонтһыҙ өсәр скважина, ә У8—3 насостары менән алтышар скважина бораулана. Оборудованиеларҙы бораулау эштәре бөткәндә, ҡабул ителеп алынған ваҡыттағы кеүек үк, комплектлы тапшырыла.

Хәҙер мин, Магнитогорск домнасыларының башланғысына ҡушылып, иптәш Сталинга яҙған хатты тикшергәндә оборудованиене тағы ла яҡшыраҡ тәрбиәләргә йөкләмә алдым һәм уны намыҫ менән үтәйем.

А. Филимонов,

«Туймазынефть» тресы, 2-се номерлы бораулау конторһы слесаре.

Һүрәттә: Октябрьский ҡалаһы «Туймазынефть» тресының торлаҡ йортоноң фасады.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Тыныслыҡ вахтаһында

Эштән ҡайтып килгәндәме, ял көндәрендә йөрергә сыҡҡандамы, Октябрьскийгә ҡарап һоҡланмайынса булдыра алмайым. Иҫ китерлек, әкиәттәге кеүек тип әйтерлек тиҙлек менән үҫә, гүзәлләнә барған ҡала миндә сикһеҙ ҙур ғорурлыҡ тыуҙырҙы.

Ошо ҡала менән бергә яңы кешеләр үҫте. Кешеләр менән бер рәттән, мин дә үҫтем: ябай эшсенән цех начальнигына тиклем үрләнем. Бына шуның өсөн дә ҡала миңә айырыуса яҡын һәм ҡиммәтле. Бына шуның өсөн дә ҡаланың биш йыллыҡ юбилейе минең юбилейем, ҡаланың тантанаһы минең тантанам.

Бына ошондай ҡалаларҙа, колхоз ауылдарында совет кешеләре бәхетле, тыныс йәшәһен өсөн фашистик йыртҡыстарға ҡаршы батырҙарса һуғыштым. Фронтта күрһәткән батырлыҡтарым юғары баһаланды: миңә Советтар Союзы Геройы исеме бирелде.

Хәҙер бөтә донъяла тыныслыҡ еңһен өсөн эшкә бөтә көсөмдө һәм һәләтлегемде бирәм. Мин етәкселек иткән цех, тыныслыҡ вахтаһына баҫып, иптәш Сталинға яҙған хатта үҙ өҫтөнә алған социалистик йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәй һәм ҡаланың биш йыллыҡ юбилейен уңышлы хеҙмәт күрһәткестәре менән ҡаршылай.

Ш. Ғәтиәтуллин,

Советтар Союзы Геройы, «Туймазыбурнефть» тресы, беренсе номерлы бораулау конторһының долото цехы начальнигы.

АЛТЫ СКВАЖИНА ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮ

«Туймазынефть» тресының икенсе номерлы промыселында коммунистар — операторҙар Маврина һәм Октябрьский ҡала Советы депутаты Щербакова иптәштәр инициативаһында операторҙар араһында бер үк ваҡытта алтышар скважина хеҙмәтләндереү өсөн хәрәкәт башланғайны.

Был хәрәкәт хәҙер ҙур ғына һөҙөмтәләр бирҙе. Ун оператор эштән бушатылды ла инде. Улар эксплуатацияға тапшырылған скважиналарҙы хеҙмәтләндерәсәктәр.

С. Шибалов.

Фидакәр хеҙмәт

«Туймазынефть» тресының беренсе номерлы промыселының 2-се участка операторҙары, Магнитогорск металлургтарының гүзәл башланғысына ҡушылып, үҙ өҫтәренә алған йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәү өсөн көрәшәләр.

Ер аҫты ремонты операторының ярҙамсыһы сирләп китеү сәбәпле эшкә сыҡманы. Әгәр ҙә башҡа кеше булмаһа, подъемникте ремонтлау 8 сәғәткә һуҙылыр һәм скважина шул уҡ ваҡытҡа һуңлап эшкә башлар ине. Был күңелһеҙ хәлдән өлкән оператор иптәш Ғилманов ҡотҡарҙы. Ул үҙ сменаһынан һуң килмәгән кеше урынына вахтала ҡалды. Иптәш Ғилмановтың фиҙакәр эше арҡаһында подъемник ваҡытында ремонтланып бөттө. Скважина тағы ла нефть бирә башланы.

Инженер Ковалев методын өйрәнеү һәм күҙәтеүҙәр үткәреү, техниканы ярҙамға саҡырыу фонтан скважиналарын хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу методикаһын эшләп сығарырға мөмкинлек бирҙе. Бындай методты стахановсы операторҙар Демина һәм Кузнецова иптәштәр тәҡдим иттеләр. Билдәләнгән планды тормошҡа ашырыу өсөн 129-сы номерлы скважина автомат һурғыс йәки ҙур күләмле мерник ҡуйырға кәрәк ине.

Өлкән оператор иптәш Бикбаев ике көн буйы электр цехына тынысланмай бирмәне. Һөҙөмтәлә электромеханик уйлап тапҡан автомат һурғыс ҡуйылды һәм эшкә ебәрелде.

Шулай итеп, скважиналарҙы күҙәтеү, нефть сығарыу эштәрендә автоматтар ҡулланыу арҡаһында участкалаға дүрт төркөм скважиналар өс төркөмгә бүленде. Был бер нисә операторҙы башҡа эшкә күсерергә мөмкинлек бирҙе.

Хәҙер беҙҙең участка кешеләре тыныслыҡ вахтаһын дауам итәләр һәм улар Ватан алдында бурыслы булып ҡалмаясаҡтар, иптәш Сталинга яҙған хатта алған йөкләмәне намыҫ менән үтәйәсәктәр.

Л. Терновцева,

«Туймазынефть» тресының 1-се номерлы промыселының 2-се участкаһы мастеры.



Нефтселәр ҡалаһы — Октябрьскийҙең төҙөлөүенә 1951 йылдың 5 апрелендә 5 йыл тула. Ул биш йыл эсендә ҙур индустриаль ҡала булып үҫеп сыҡты.
Һүрәттә: Ҡаланың үҙәк урамдарынан береһе — Совет урамы күренеше.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Тиҙләтелгән метод менән бораулауҙа ҡайһы бер тәжрибәләр

Беҙҙең тресттың тиҙ бораулау мастерҙары Иван Куприянов һәм Павел Балабанов иптәштәр илебеҙҙең Көнсығыш шарттарында беренсе тапҡыр тиҙләтелгән метод ҡулландылар. Улар, форсированный режимда эшләп, бик ҙур бораулау тиҙлегенә өлгәштеләр. Мастер Куприянов, станок-айға 1007 метр проходка биреп, бораулау эшендә ҙур рекорд ҡуйҙы.

Мин етәкселек иткән бригада коллективе лә тиҙләтелгән бораулау методына күсте. Беҙҙең идеяны трест һәм контора етәкселәре хупланылар.

Беҙ, үҙебеҙҙең бригадала булған техниканы һәм бораулау оборудованиеларен тулыһынса һәм рациональ файҙаланып, беренсе тапҡыр тиҙләтелгән режимда 242-се скважинаны борауланыҡ. Бораулау һөҙөмтәһе станок-айға 1002 метр булды. Тимәк, иптәш Куприяновтың рекорд тиҙлегенә был тик биш метр ғына еткерелмәне, тигән һүҙ.

Был 1949 йылда булды.

Үткән 1950 йыл беҙгә яңы уңыштар килтерҙе. Дөрөҫ, тәүге көндәрҙә еңел булманы, икенсе, 550-се скважинаны бораулау уңышһыҙ булды: беҙ 300 сәғәттән дә артыҡ ваҡытты файҙаһыҙ эштәргә үткәрҙек. Станок-айға тик 614 метр ғына проходка бирелде. Станок-айға 614 метр тиҙлек — ул нормаль тиҙлектән юғары. Ләкин беҙ уның менән генә ҡәнәғәтләнмәнек.

477-се номерлы скважинаны бораулағанда беҙ булған етешһеҙлектәрҙе иҫкә алдыҡ, скважинаның, баштан алып уны эксплуатацияға тапшырғанға тиклем, проходка графиген, уның геологик-техник нарядын тикшереп барҙыҡ. Һөҙөмтәлә файҙаһыҙ эштәр өсөн үткән ваҡытты ҡырҡа кәметеүгә өлгәштек. Уларға тик алты сәғәт кенә ваҡыт талап ителде. Авария ваҡиғалары бөтөнләйгә булманы. Бригада проходканы 1145 метр тиҙлек менән тамамланы.

478-се номерлы скважинаны бригада коллективе станок-айға 1100 метр коммерческий тиҙлектә бораулаңы.

Үткән йылда беҙҙең бригада ошондай ҙур уңыштарға нисек өлгәште һуң?

Бөтәһенән элек, бригада члендәре әҙерлек һәм ярҙамсы эштәрҙе кәметеүгә ҙур әһәмиәт бирҙеләр. Бораулау торбаларын, долотоларҙы һәм элеваторҙарҙы, шулай уҡ аҫҡыстарҙы тикшереү һәм башҡа шундай әҙерлек эштәрен вахталар бораулау ваҡытында башҡарҙылар.

Беҙҙең буровойҙар ҡеүәтле ике насос менән йыһазландырылғандар. Алты дюймлы «втулкаларҙа» эшләп беҙ был насостарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеген секундына 43 метрға, ә баҫымды 100—110 атмосфераға тиклем еткерҙек. Шулар менән тиҙләтелгән режимда эшләү тәьмин ителде лә.

Юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге беҙҙә шулай уҡ алты дюймлы бораулау торбаларын ҡулланыу һөҙөмтәһендә лә өлгәшелде. Улар беҙҙең бригадаға беркетелгәйнеләр һәм улар менән беҙ ремонтһыҙ дүрт скважинаны борауланыҡ. Комплект хәҙер ҙә эшләй.

Бригада коллективе оборудованиеларҙы һәм бораулау инструменттарын һаҡлау, уларҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн айырыуса ҙур хәстәрлек күрә. Бригада оборудованиеларҙың төҙәк булмаған урындарын үҙ ваҡытында бөтөрә һәм профилактик күҙәтеү алып бара. Шуға күрә лә беҙ лебедкаларҙы өс скважинаны бораулағансы ремонтһыҙ эшләтеүгә өлгәштек. Насостар форсированный режимда дүрт скважинаны ремонтһыҙ бораулаңылар.

Беҙ өлгәшелгәндәр менән мауыҡмайбыҙ. Ә оборудованиеларҙың ремонт-ара эшләү срогын оҙайтыу һәм уларҙы етештереүсәнлерәк эшләтеү өсөн көрәшәбеҙ. Магнитогорск металлургтары өлгөһөндә беҙҙә техниканы тулыһынса файҙаланыу өсөн хәҙер социалистик ярыш йәйелдерелде.

Иҙелмә бирәүсе насостарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеген секундына 43 литрға еткереү турбобурҙың забой ҡеүәтен арттыра. Шуның менән бергә, проходканың механик тиҙлеге лә күтәрелә. Бынан башҡа, насостарҙың юғары етештереүсәнлеге буровойҙан ер тоҡомдарын сығарыуҙы тиҙләтә. Был үҙ нәүбәтендә долотоға үҙәк нагрузканы ҡаты тоҡомдарҙа 24 — 26 тоннаға тиклем, ә уртаса һәм йомшаҡ тоҡомдарҙа 12 — 18 тоннаға тиклем арттырыуға мөмкинлек бирҙе. Долотоларҙы беҙ бораулана торған тоҡомдоң ҡатылығына һәм ныҡлығына ҡарап һайлап алдыҡ.

Беҙ долотоларҙы рациональ файҙаланыуға даими ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Һәр бер долотоны төшөргәндә, уны забойға бер нисә метр еткермәҫтән үк, үткәндәге долото диаметрының тоҙыуына ҡарап, беҙ скважинаға киңәйтеү үткәрҙек. Был, беренсенән, бөтә скважина буйынса диаметрҙың бер төрлө булыуын тәьмин итһә, икенсенән, инструменттең скважина эсенә тығыҙланып ултырыуына юл ҡуймай. Бынан һуң долото забойға етеү менән үк, беҙ 20 — 30 минут эсендә алдағы интервалда долотоға максималь нагрузка бирҙек. Соҡоу аҙағында турбобур максималь нагрузканы ҡабул итмәй башлай. Был ваҡытта беҙ долотоға төшкән нагрузканы кәметәбеҙ, ә турбобур нагрузканы ун тоннанан кәм ҡабул итә башлаһа, долотоны өҫкә күтәрәбеҙ.

Долотоға нагрузканы арттырыу менән скважинаның ҡыя бораулаңыу хәүефлеге арта бара. 477-се номерлы скважинаны бораулағанда, беҙ уның вертикаллелеген һаҡлау өсөн махсус ҡулайлаштырыуҙар ҡулландыҡ. Ләкин улар беҙгә ыңғай һөҙөмтәләр бирмәнеләр. Скважиналар 5 граус ярымға яҡын ҡыйыш бораулаңдылар.

478-се номерлы скважинаны бораулағанда, беҙ икенсе саралар ҡулландыҡ. 150 метрҙан 1592 метрға тиклем интервалда турбобур өҫтөнә киңәйткес ҡуйылды. Ул скважинаның вертикаллелеген һаҡлай. Скважинаның ҡыйыш бораулаңыуы бында өс градус ҡына тәшкил итә. Киңәйткестең эшенә контроль яһау шарошкаларҙың һәм бармаҡтарҙың тоҙыуын тикшереү юлы менән башҡарыла.

Беҙҙең бригада коллективе балсыҡ иҙелмәһенең сифатына ла айырыуса ҙур әһәмиәт бирҙе. Яҡшы сифатлы иҙелмә инструменттең скважина эсендә ҡатып ҡалыуына мөмкинлек бирмәй. Емерелеүгә һәм сальник хеҙмәтен үтәүгә һәләтле булған ер тоҡомдары скважинанан үргә күтәрелгәндә, беҙ иҙелмәгә нефть өҫтәйбеҙ. Мәҫәлән, һуңғы скважинаны бораулағанда, 300 метр, ә һуңынан 800 метр тәрәнлектә һәм 1100 метрҙан 1200 метрға тиклем интервалда нефть индерелде. Һуңғы зонаға етер саҡта беҙ балсыҡ иҙелмәһенең удель ауырлығына һәм уның фильтрләнеүенә айырыуса ҙур әһәмиәт бирҙек.

Бораулауҙа юғары тиҙлеккә өлгәшеү шулай уҡ күтәреү-төшөрөү операцияларын тиҙ башҡарыу менән дә бәйләнгән. Беҙҙең бригада члендәре бөтә буровойҙарҙа ла күтәреү-төшөрөү операциялары нормаларын арттырып үтәнеләр. 478-се номерлы скважинаны бораулағанда, бораулаусы Ғәлиуллин вахтаһы норманы 152,7 процентҡа, иптәш Туҡаев вахтаһы — 189,7, иптәш Хәбибуллин вахтаһы 125,5 процентҡа үтәнеләр.

Бәләкәй механизацияларҙың тулы комплектен оҫта файҙаланыу беҙгә күтәреү-төшөрөү операцияларын тиҙерәк башҡарыуға мөмкинлек бирҙе. Унан һуң беҙ үҙебеҙҙә бораулаусы Сөнәғәт Ғәлиуллин вахтаһының эш тәжрибәһен киң тараттыҡ.

Норманы арттырып үтәүҙә, әҙерлек, ярҙамсы һәм ремонт эштәрендә ваҡытты аҙ юғалтыуҙа вахталарҙың һәм бригадаларҙың ойошҡанлыҡ менән эшләүҙәре ҙур әһәмиәткә эйә. Беҙҙең бригада составы оҙаҡ йылдар буйы алышынмай. Был беҙҙең өсөн ыңғай шарт булып тора.

Вахталар араһында йәйелдерелгән социалистик ярыш айырыуса йәнле төҫ алды. Һәр көн һайын эш һөҙөмтәһе графикка яҙылып барылды. Беҙҙә бөтә скважинаны бораулау циклы өсөн дә, һәр бер вахта өсөн дә графиктар бар. Беҙҙең бригада күренекле бораулау мастеры иптәш Куприянов бригадаһы менән ярышты.

Шулай итеп, мин етәкселек иткән бригада члендәре үткән йылда бораулау оборудованиеларен һәм техниканы тулыһынса һәм рациональ файҙаланып, һәр бер уңышлы эш методтарын ҡулланып, ошондай рекорд уңыштарға өлгәштеләр.

Быйыл бригада коллективе үҙенә яңы йөкләмә алды. Ул, 8 мең метр бораулап, бораулау тиҙлеген станок-айға 1200-гә еткерергә тейеш. Иптәш Куприянов бригадаһы менән социалистик ярыш дауам итә.

Беҙ үткән йылдағы уңыштар менән мауыҡмайбыҙ. Беҙҙә әле файҙаланылмаған бик күп резервтар һәм мөмкинлектәр бар. Беҙ уларҙы быйыл тулыһынса файҙаланырға тейешбеҙ.

Ҡасим Белянчинов,

«Туймазыбурнефть» тресының бораулау мастеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Парник хужалығын ойошторoу

Республикабыҙҙа колхоздарҙы эреләтеү йәшелсәселекте киң йәйеп ебәреүгә ҙур перспективалар аста. Быйыл күпселек колхоздарҙа йәшелсә культураларының сәсеү майҙаны 50 — 60 гектарҙан арта.

Йәшелсәләр сәсеүҙең государство планында помидор һәм кәбеҫтә кеүек рассада культуралары ҙур урын ала. Колхоздарҙа рассадалар үҫтереү өсөн парниктәр төҙөү талап ителә. Ул яҙын көндәрҙә төҙәлергә һәм эксплуатацияға тапшырылырға тейеш. Парниктәр, шулай уҡ теплицалар иртә өлгөрөүсән йәшелсәләрҙе етештереүҙә лә ҙур әһәмиәткә эйә булып торалар.

Парниктәрҙе дөрөҫ планлаштырыу һәм белеп төҙөү — серьез мәсьәлә ул. Парник хужалығы өсөн ауыл яҡынында, һыу буйында участка бүленә. Көнгә төшөп торған был битләүек участка төньяҡ елдәрҙән ышыҡ урында булдырыла. Ситәндәр, ҡаралтылар һәм ағастар менән ышыҡланған бындай урындағы йылылыҡ температураһы, асыҡ яландарға ҡарағанда, 6 — 7 градусҡа юғары була. Участка майҙанында ер аҫты һыуҙары 1,5 метрҙан да юғары булмаҫҡа тейеш. Ситтән һыуҙар ағып төшмәһен өсөн парник төҙәлгән участка майҙаны канауҙар менән солғап алына.

Беҙҙә киң таралған рус парниктәре түбәндәгеса төҙәләләр: парник 20 рамалап тора. Уның һеҙәк өҫтө көньяҡҡа табан, буйы көнсығыштан көнбайышҡа табан ҡаратып ҡуйыла. Бер гектар майҙанға ошондай 2000 — 2300 рамалы парниктәр урынлаштырыла. Бының өсөн тәүҙә майҙан тигеҙ итеп 8 кварталға бүленә. Парниктәр араларында көнсығыш яғында 10 метр киңлектә һәм көнбайыш яғында 15 метр киңлектә юлдар ҡалдырыла. Бында көнсығыш юлда тупраҡ, көнбайыш юлда тиреҫ һаҡлана. Парниктәрҙең һуҙынҡылығы йүнәлешендә йөрөү өсөн 5 метр киңлектә юлдар ҡалдырыла.

Парниктәрҙе, төҙәлеш материалдарына экономия яһау һәм уны хеҙмәтләндереүҙе еңеләйтереү күҙләгенән ҡарап төҙөргә кәрәк.

Һәр бер парник 20 раманан тора. Уның буйы 21 метр, киңлеге 1,5 метр, тәрәнлеге 75 сантиметр була. Рамалар ҡуйыла торған урында ергә 12 — 14 сантиметр диаметрлы бурапәләрҙән бер рәт бура ҡорола. Уның көньяҡ өлөшө төньяҡ өлөшөнә ҡарағанда 10 — 12 сантиметрға түбәнерәк була. Был маҡсатта 20 рамалы бер парник төҙөү өсөн өсөнсө сортлы бер кубометр ағас, ярты кубометр таҡта, 30 квадрат метр быяла һәм 33 килограмм замаска талап ителә. Парник соҡорҙары, ғәҙәттә, көҙҙән үк әҙерләнеп ҡуйыла.

Парник соҡорҙары көҙҙән әҙерләнмәһә, йәшникле парниктәр төҙөргә мөмкин. Бының өсөн ҡалынлығы 3 — 4 сантиметр, киңлеге 20 — 24 сантиметр булған таҡталарҙан, юғарыла күрһәтелгәнсә, 4 — 6 рамалы йәшниктәр яһала. Улар 20 — 30 сантиметр ҡалынлыҡта тиреҫ таратылған ергә батырып ҡуйылалар. Йәшниктәрҙең көньяғы, төньяҡҡа ҡарағанда, 10 — 12 сантиметрға түбәнерәк була. 6 рамалы парник яһау өсөн 0,14 кубометр таҡта талап ителә.

Һәр бер колхоз үҙенең йәшелсә сәсеү планын үтәүҙе күҙ алдында тотоп, нисә дана парник эшләү кәрәклеген еңел иҫәпләй ала. Бының өсөн иң элек һәр бер культура буйынса нисә мең дана рассада кәрәклеге билдәләнә.

Бер гектар майҙанға рассадалар ултыртыу өсөн помидор 30 мең, һунлап өлгөрөүсе кәбеҫтә 40 мең, иртә өлгөрөүсе кәбеҫтә 25 мең төп талап ителә. Һәр бер рамала 200 төп помидор, йәки 300 төп кәбеҫтә рассадаһы үҫтерелә ала. Тимәк, бер гектарға помидор рассадаһы ултыртыу өсөн 150 рамалы, кәбеҫтә өсөн 100 рамалы парник эшләргә кәрәк.

Парник хужалығы йылытыуҙы талап итә. Бының өсөн ат тиреҫе яҡшы. Шулай уҡ өҫтән бер өлөшөнә бысҡы ожо йәки торф ҡатнаштырылған һыйыр тиреҫен файҙаланырға мөмкин.

Тиреҫ рамалар аҫтына һалына. Һәр бер рама өсөн 7 центнер тиреҫ талап ителә. Тимәк, Өфө районы Фрунзе исемендәге колхозда 2000 рамалы парник хужалығы өсөн 1400 тонна тиреҫ кәрәк.

Парниктәргә һалынған тупраҡ яҡшы структуралы, уңдырышлы булырға тейеш. Был маҡсатта сиҙәм тупрағын алырға тәҡдим ителә.

Ниндәй рассада үҫтерелеүенә ҡарап, парниктәге тиреҫ өҫтөнә һалынған тупраҡтың ҡалынлығы төрлө була. Помидор рассадаһы парнигенә 18 — 20 сантиметр ҡалынлыҡта һалыу өсөн сереган тиреҫ менән тигеҙ өлөштә ҡатнаштырылған сиҙәм тупрағы йәки йәшелсә баҡсаһы тупрағы файҙаланыла. Ҡыяр рассадаһы өсөн бер өлөш сиҙәм тупрағына ике өлөш серегән тиреҫ алына, ул азот, фосфор һәм калий ашламалары менән ашлана. Бындай тупраҡ парникка 20 — 22 сантиметр ҡалынлыҡта һалына. Салат һәм түңәрәк редис рассадаһы өсөн 12 — 14, озонса редис өсөн 18 — 20 сантиметр тупраҡ булдырыла.

Парник хужалығында 20-ләп төрлө йәшелсә рассадаһы етештерелә. Уларҙың парниктәрендә тупраҡтың ҡалынлығы күп төрлө була. Бында тик шуны әйтергә кәрәк: парниктәрҙә серегән тиреҫ һәм ҡом ҡушып әҙерләнгән сиҙәм тупрағы 12 — 20 сантиметр ҡалынлыҡта файҙаланыла. Ошо иҫәптән сығып эш иткәндә, бер кубометр тупраҡ 4 — 5 рамаға етә.

Рассадаларҙы төнгө һалҡындарҙан ныҡ һаҡларға кәрәк. Был маҡсатта улар төнгәлеккә ҡаплап ҡуйылалар.

Йәшелсә баҡсаһында яҙғы эштәрҙе уңышлы башҡарыу өсөн бөтә саралар күрелергә тейеш. Хәҙер сортлы орлоҡтар, минераль ашламалар, химикаттар әҙерләргә, звеноларға колхозсыларҙы беркетергә, уларҙы эш пландары һәм агротехник саралар менән таныштырырға кәрәк.

Агроном **А. Әхмәров.**

АЛДЫНҒЫ МАЛСЫЛЫҠ ФЕРМАҺЫ

Башҡортостан ауыл хужалығы институтының Миловка тәжрибә хужалығы коллективе малсылыҡты үҫтереүҙә һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреүҙә яҡшы уңышлыҡтарға өлгәште. Бында үткән йыл 100 һыйырҙан 102 быҙау тәрбиәләп үҫтерелде, һәр бер 100 һарыҡтан 135 бәрәс, һәр бер 100 сусҡанан 2450 сусҡа балаһы алынды.

Был тәжрибә хужалығының коллективе быйыл һарыҡ үҫтереү планын 135 процентка, сусҡасылыҡ планын 225 процентка үтәргә һәм һәр бер һауын һыйырҙан 3000 литр һөт һауып алырға йөкләмә алды.

Ә. Әхмәтов.

МЕХАНИК

Дәүләтҡол Дәүләтбаев үҙенең йәшлеген ауыр тормошта үткәрҙе. Уның атаһы Дәүләтбай ҡарт, кулак Ибраһимовта сиктән тыш ауыр эштәрҙә йөрөп, буҡыр булып ҡалды. Ул йәшләй Дәүләтҡол иңе атаһы урынына кулакка ялсы яллана. Тәүҙә ул көтөүсе булып йөрөнө, а һуңынан бөтә эштәрҙе башҡарыусы хеҙмәте, батраҡлығы булды.

— Ул сакта аслы-туҡлы йәшәргә тура килде, — ти иптәш Дәүләтбаев үткәнде хәтерләп. — Тик Совет власе генә беҙгә, батраҡтарға иркле тормош бирҙе.

Партия һәм хөкүмәт ауыл хужалығын коллективлаштырыуға күсте, кулактар, синыф булып ярылып бөтөрөлә. 1928 йылда ауылда «Дим» колхозы ойошторолдо. Колхозға яңы машиналар, шул иҫәптән трактор килде. Был бөрәсе трактор ине. Дәүләтҡол бөрәсе булып шул машинала эшләргә теләүен белдерҙе. 1929 йылда ул тракторсылар курсында уҡыны. Ул машинаны яҡшы үҙләштерҙе һәм «Берлек» колхозында тракторист булып эшләне.

1932 йылда районда Ново-Троицк МТС-ы ойошторолдо һәм иптәш Дәүләтбаев унда трактор бригадаһы һәм моторҙар буйынса механик булып эшләне.

МТС-та иптәш Дәүләтбаев механизаторҙар кадры әҙерләүгә ныҡ иғтибар итә. Ул тракторсыларҙы, слесарҙарҙы, токарҙарҙы әҙерләй, уларҙы алдынғыларҙың эш методтарына өйрәтә. Ул Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҡатын-ҡыҙҙарҙан бик күп механизаторҙар әҙерләне.

1943 йылда иптәш Дәүләтбаев МТС-тың өлкән механиге булып эшләй башланы. Эш һөйөүсән Дәүләтҡол был бурысты ла намыҫлы башҡара. МТС эшен яҡшыртыуҙа, колхоздарҙы өлгөлө хеҙмәтләндереүҙә бөтә көсөн һалып эшләй, общественный эштәрҙә актив ҡатнаша. 1947 йылда ул Башҡорт АССР-ы Верховный Советына депутат булып һайланды һәм үҙ бурысын намыҫлы башҡарҙы.

Иптәш Дәүләтбаев 1949 йылда Дурас МТС-ына өлкән механик итеп эшкә ебәрелде.

Дурас МТС-ы хәҙер 1951 йылдың башы эштәренә өлгөлө әҙерләнә. Тракторҙар ремонтлауҙа прогрессив метод ҡулланыла — эш сәғәт графиге буйынса алып барыла. Һөҙөмтәлә хәҙер МТС тракторҙар ремонтлауҙың йыллыҡ планын яҡшы сифатлы итеп үтәне.

Шишмә районының Дурас МТС-ы хәҙер алдынғы МТС-тарҙың береһе булып тора. МТС-ты алдынғы итеүҙә уның өлкән механиге иптәш Дәүләтбаевтың хеҙмәте әлбиттә бик ҙур. Ул МТС производствоһында инде 20 йыл эшләй. Уңышлы эштәре өсөн ул «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ», «Почет билдәһе» ордендәре һәм медалдәр менән наградланды һәм күптән түгел ул тағы Башҡорт АССР-ы Верховный Советына депутат итеп һайланды. Иптәш Дәүләтбаев һайлаусыларҙың ышанысын намыҫ менән аҡлай. Ул яҙғы сәсеүҙе өлгөлө үткәреү өсөн бөтә сараларҙы күрә.

Ул Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеев методын МТС-та файҙаланыуға ҙур инициатива күрһәтте.

М. Ғәмбәров.

АГРОТЕХНИКА КУРСЫ ЯҠШЫ ЭШЛӘЙ

Красноусол. Сталин исемендәге эреләтелгән колхозда ойошторолған өс йыллыҡ агротехника курсы яҡшы эшләй. Был курста баҫыусылыҡ бригадаһы бригадирҙәре һәм колхозсылар, бөтәһе 24 кеше уҡый. Курс менән Бурлы МТС-ының участка агрономы иптәш Ильясов етәкселек итә.

А. Ҡадиров.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәнәшмәһе

ПАРИЖ, 30 март. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Сит ил эштәре министрҙәре Советының көн тәртибен эшләү өсөн саҡырылған дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәнәшмәһенең 20-се ултырышы булып үтте. АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Билдәле булыуынса, Совет делегацияһы көн тәртибе буйынса килешелгән ҡарарға килеүҙе еңеләйтергә теләп, 28 мартта яңы тәҡдим индергәйне.

Ләкин бөгөнгө ултырышта өс держава вәкилдәренең сығышы совет делегацияһының яңы тәҡдиме нигеҙендә, кәнәшмәлә ҡатнашыусыларҙың бөтәһенең дә бер фекергә килеүҙәренә өлгәшеләр тип бик урынлы өмөт иткән киң общественность фекерен алданы.

СССР делегацияһы үҙенең яңы тәҡдимен индергәнгә хәҙер инде ике көн булып үтһә лә, АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре совет делегацияһының конкрет тәҡдименә ҡарата үҙ мөнәсәбәттәрен асыҡтан-асыҡ әйтеп биреүҙән баш тартырға тырыштылар.

Джессеп йәнәһе «дөйөм килешелгән көн тәртибен ҡабул итеү яғында торам» тине. Ләкин шунда уҡ тәҡдимдәге формулировкаларҙы тикшерә башларға кәрәк һәм «бөтә тәҡдимдәрҙең мәғәнәһен һәм маҡсатын яҡшылап аңларға, шулай уҡ уларҙың айырым өлөштәрен, һүҙҙәрен, һөйләмдәрен, теге йәки был тексҡа нилектән айырма булыуын һәм башҡаларҙы төшөнөргә кәрәк» тигән булып, шунда уҡ томанлы фекер йөрөтөүҙәргә күсте.

Дэвис совет делегацияһының тәҡдиме уның һорауына үҙе яуап бирә торған булһа ла, совет тәҡдимендә булған күп кенә положениелар тураһында яһалма «шикләнеү» белдерҙе.

Франция вәкиле Пароди ҙә шулай уҡ Джессеп менән Дэвис эҙенән китте.

СССР вәкиле А. А. Громыко был сығыштарға яуап биреп, былай тине:

— Совет делегацияһы 28 мартта яңы тәҡдим индерҙе. Өс держава вәкилдәре ул тәҡдим тураһында үҙ фекерҙәрен әйткәнгә тиклем, уны өйрәнәсәктәрен белдерҙеләр. Совет делегацияһы АҠШ, Великобритания һәм Франция делегацияларының совет тәҡдименә мөнәсәбәттәрен белергә теләр ине. Ләкин, беҙ был ултырышта, һәр төрлө һорауҙарҙан башҡа, бер нәмә лә ишетмәйбеҙ. Әгәр ҙә өс держава вәкиле беҙҙең тәҡдим тураһында аныҡ фекер әйтергә әҙер түгел икән, ул ваҡытта улар быны асыҡ әйтһендәр ине.

Пароди менән Дэвис үҙҙәренең артабанғы сығыштарында асығыраҡ итеп һөйләнеләр. Улар нигеҙҙә үҙҙәренең элекке тәҡдимдәрен алға ҡуйыуҙа һәм совет делегацияһының яңы тәҡдименә ҡаршы һәр төрлө нигеҙһеҙ дәлилдәр эҙләүҙәрендә дауам иттеләр.

Пароди менән Дэвистең сығыштарына ҡағылып, Громыко, йәнәһе өс держава тәҡдиме совет делегацияһының 28 март тәҡдимендә әйтелгән бөтә мәсьәләләрҙе лә, шул иҫәптән Германияны демилитаризациялау һәм ҡоралы көстәрҙе кәметеү тураһындағы мәсьәләне лә ҡарарға мөмкинлек бирә, тигән белдереүҙәренең нигеҙһеҙ булыуын күрһәтте. Громыко аңынан, өс державаның тәҡдиме ҡоралланыу артынан тағы ла ныҡыраҡ ҡыуыу өсөн һәм Көнбайыш Германияны ҡайтанан милитаризациялау буйынса артабан саралар күреү өсөн өс державаға тағы ла күберәк мөмкинлек биреүҙе маҡсат итеп ҡуя тип аңлаған хәтергә төшөрҙө. Ләкин, тине Громыко, дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре советының сессияһын яңы һуғышҡа әҙерләнеү буйынса саралар үткәреүгә кемгә лә булһа күберәк мөмкинлек биреү өсөн саҡырырға тәҡдим ителмәй. Дэвис Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләне ҡоралланыуҙың кимәле тураһындағы мәсьәлә менән бәйләп ҡуйыусы һәм уға бүйһондороусы өс держава тәҡдименең өҫтөнлөгөн иҫбат итергә маташты. Ул шулай уҡ, йәнәһе Германияла өс держава тарафынан үткәрелә торған саралар Көнсығыш илдәрҙә, шул иҫәптән Советтар Союзында ла ҡоралы көстәрҙең юғары кимәлдә тороуы һөҙөмтәһе булып тора, тип беҙҙе ышандырырға маташты. Совет делегацияһы бындай раҫлауҙың мәғәнәһеҙ булыуын әйтеп үткәйне инде. Ошо айҡанлы мин был мәсьәләлә өс держава позицияһының эҙмә-эҙлекле булмауын күрһәтеп үтергә теләйем. Бығаса тиклем улар, йәнәһе был тәҡдимдәр министрҙәрҙең ҡарарҙарын алдан билдәләү булып торалар, тигән һылтау аҫтында совет тәҡдимдәренә ҡаршы килделәр. Ләкин Дэвис, үҙе ултырған ботаҡты үҙе үк балта менән сапҡанлығын һиҙмәй торғандыр.

Унан һуң Джессептең Болгария, Румыния һәм Венгрия менән ярашыу договорҙары төҙөү тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индереү хаҡында өс держава делегацияһы исеменән 27 мартта индерелгән тәҡдим көсөндә ҡала, тигән белдереүе айҡанлы Громыко былай тине:

— Совет делегацияһы, был тәҡдим бары тик көн тәртибе буйынса үҙ-ара һөйләшеүҙәребеҙҙе ҡатмарлаштырырға ғына һәләтле булыуын күрһәткәйне инде. Был мәсьәләлә совет делегацияһы ошонан сығып эш итте: был мәсьәләне көн тәртибенә индереү өсөн бер төрлө лә нигеҙлек юҡ һәм өс держава тәҡдиме уларҙың үҙ белдереүҙәренә һәм килешелгән ҡарарға килеү ынтылышына ҡапма-ҡаршы килә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар үҙ тәҡдимдәрен алға ҡуйыуҙа дауам итәләр, был Джессептең бөгөнгө белдереүенән дә күренеп тора.

Ошо айҡанлы совет делегацияһы түбәндәге тәҡдим индереүҙе кәрәк тип иҫәпләй.

«Договорҙарҙа кешенең хоҡуҡтары тураһындағы ҡарарҙарҙы, хәрби ҡарарҙарҙы һәм бәхәстәрҙе хәл итеү тураһындағы йомғаҡлау ҡарарҙарын да индереп, Италия, Румыния, Болгария һәм Венгрия менән ярашыу договорҙары төҙөү, динацификация һәм демократизация тураһындағы һәм хәрби енәйәтселәр тураһындағы мәсьәләләрҙе лә индереп, Германияға һәм Австрияға ҡағылыусы мәсьәләләрҙә державаның һүҙ ҡуйышыуы».

Был тәҡдимде нигеҙләп, Громыко былай тип күрһәтте: министрҙәр Советы бары тик өс ил менән генә — Болгария, Венгрия һәм Румыния менән генә ярашыу договорҙары төҙөү тураһындағы мәсьәләне тикшереү һәм Италия менән ярашыу договорының үтәлеше тураһында, шулай уҡ Германия менән Австрияға ҡағылған килешеүҙәр тураһында ла һөйләшмәү яғынан һәм нигеҙһеҙ булыр ине. Договорҙар буйынса алынған йөкләмәләрҙе килешеүҙәр буйынса алынған йөкләмәләрҙән айырырға ярамай. Германия менән Австрияла Көнбайыш державалар тарафынан үткәрелә торған саралар Гитлер режимының актив тәрәфдәрен һәм һәр төрлө гитлерсыларҙы власть башына ҡайтанан ултыртыуға йүнәлтелгән булыуын иҫәпкә алғанда, динацификация, демократизация һәм хәрби енәйәтселәр тураһындағы мәсьәлә Германия менән Австрияға ҡағылған йөкләмәләрҙең әһәмиәте бигерәк асыҡланғаны. Ул саралар шулай уҡ хәрби енәйәтселәрҙе иреккә сығарыуға ла йүнәлтелгәндәр. Был мәсьәләләрҙең әһәмиәте тағы ла шуның менән һыҙыҡ өҫтөнә алына, АҠШ, Великобритания һәм Франция Көнбайыш Германия һәм Австрияла демократик ойошмаларҙы һәм демократ деятелдәрҙе эҙәрлекләү сәйәсәтен үткәрәләр. Улар шуның менән бергә үҙҙәренең реваншыселек, агрессорлыҡ ҡараштарын һәм пландарын йәшермәүсе реакцион элементтарҙе, реваншыс ойошмаларҙы, һәр төрлө фашистик ... дыҡтарҙы дәртләндерәләр.

Унан ары Громыко, совет делегацияһы шулай уҡ көн тәртибенә түбәндәгесә пункт индереү тураһында тәҡдим итеүен тип күрһәтте:

«Атлантик пакт һәм Англияла, Норвегияла, Исландияла һәм Европаның башҡа яҡын Көнсығыштың башҡа илдәрендә Американың хәрби базалар төҙөүе тураһында».

СССР вәкиле былай тине: СССР менән Көнбайыш державалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу тураһында мәсьәлә торғанлыҡтан, был пунктта ҡуйылған проблемалар бик ҙур әһәмиәткә эйә булып торалар. Ошо фактты кире ҡаҡыу мөмкин түгел: государстволарҙың Төньяҡ-атлантик группировкаһын төҙөү тураһындағы тура дүрт держава араһындағы мөнәсәбәт хаҡындағы мәсьәләгә бәйләнгән. Американың хәрби базалары хаҡында ла шуны уҡ әйтергә кәрәк. Шуға күрә совет делегацияһының юғарыла әйтелгән тәҡдименә ҡаршы һис бер төрлө нигеҙле дәлилдең булыуы мөмкин түгел, сөнки унда СССР менән Көнбайыш державалары араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу тураһындағы мәсьәләгә тура-тура мөнәсәбәте булған проблемалар ҡуйыла.

Совет вәкиленең сығышынан һуң *председателлек итеүсе Джессеп* ултырышты япты.

Алдағы ултырыш 31 мартҡа билдәләнде.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 1 апрель. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһе 1 апрелдә, Халҡ армияһының частәре, Ҡытай добровольцтәренең частәре менән берлектә, бөтә фронттарҙа ла дошманға ҡаршы ҡаты һуғыштар алып барыуҙы дауам иттерәләр һәм уға йәнле көстә һәм техникала ҙур юғалтыуҙар яһайҙар, тип хәбәр итте.

Сеул йүнәлешендә булған һуғыштарҙың береһендә Халҡ армияһының частәре дошмандың ... ғәскәрҙәр батальонын тулыһынса юҡ иттеләр. Дошмандың 6 самолеты атып төшөрөлдө.

Сәғит Агиш

Счетоводтар

(Хикәйә)

I

— Аттың шәбен бир әле, Вилдан ағай! — тине сельпо счетоводы Әхмәтхан.

Шәбен алмайынса ярамай. Кисә ул таңға тиклем тигәндәй ултырып, райсоюзға тигән отчетты эшләп бөтөрҙө. Был кварталдағы отчет бигерәк тә ауыр булды: тауар хаҡтары төшөү айҡанлы үҙгән кварталдарҙа булмаған яңы мәшәҡәттәр килеп тыуҙы. Әйберҙәрҙең һатылыуы ла бик күп ине. Халыҡта аҡса бар, юплерәк тауар килһә, һуға ла алалар. Бына тигән «метро»нан тегелгән ҡиҙатлы костюмы лә оса, мотоцикл, велосипед тигәнең йәйел дә, ҡышын да магазин ишегенән тәгәрәп кенә тора. Бәләкәй генә бала-сағаһына тиклем фотоаппараттың уйынсығын түгел, ҙурын, ысынын һорайҙар, «фотокор» ярамаған, «лейка» булһын. Нисә әйтһәң дә хәллелек, муллыҡ шул.

Маңлай сәстәре түбәһенә тиклем ҡойолған, Әхмәтхандың ҡыҫығыраҡ күҙҙәре бөтөнләй арыуҙы ошотто, елкәһенән ауыр йөк төшкәндәй булды. Эштән ҡайтҡас оҙаҡ ҡына йоҡламаҡсы ине, председателгә лә шулайыраҡ әйткәйне. Бары бер ғәҙәтләнгән ваҡытында тап сәғәт 8-ҙә торҙо. Ҡатыны Нәмилә лә уны бөгөн оҙағыраҡ йоҡлар тип, иртәнге сәй өсөн әҙерләнә торған ҡоймаҡты бер ҙә ҡабаланмай, ҡайҙарап ташламаҫ өсөн уттың һүрәнерәк ерендә, әйләп ҡына бешерә ине. Әхмәтхандың карауаттан тороп ултырғанын һиҙеп алғас та, тиҙ генә алға сыҡты.

— Торҙоңмы ни? Мин ашарға ла өлгөртмәнем.

— Ашыҡма, Нәмиләкәй, — уның үҙ әшенән ҡәнәғәт саҡтарында «ҡәй» ялғауы ҡушыу ғәҙәте бар ине, — мин хәҙер ат алып киләм. Уғаса әҙерләрһең, унан ашап алырмын да районға китермен.

— Районға?

Әхмәтхандың кесе ҡыҙы шул һүҙ менән уянды.

— Эйе, ҡыҙым, районға...

— Был юлы ла бүләкләрҙәр микән инде, атай?

— Белмәйем, ҡыҙым, белмәйем. Минән алда барып етмәһәләр, бәлки, бүләкләп тә ҡуйырҙар.

— Бүләкләһәләр... бүләкләһәләрме, атай, миңә төймә менән ҡаптырып ҡуя торған һап-һары туфли, скороход, әйеме?

II

Аттың шәбен бирҙеләр. Көн аяҙ. Ҡояшлы. Әхмәтхан толобон асып ебәреп кенә сананың төбөнә бик әйләп, ҡырын төшөп ятҡан. Ат дилбегә ҡаҡҡанды ла көтмәй йылдам ғына баш ташлап юрта. Әхмәтханды матур ғына уйҙар уратып алды. «Бүләкләһәләр» ти бит шаян ҡыҙ. «Туфли имеш». Ысынлап та Әхмәтхан һуңғы йылдарҙа райсоюз тарафынан отчет өсөн, һатыу планын арттырып үтәү, әҙерләүҙәр өсөн дә йыш ҡына бүләкләнә. Матур уйҙар менән тауҙы күтәрелде, «Урожай» колхозының урман полосаһын артта ҡалдырҙы. Район юлынан ике генә километр ситтәрәк ултырған Яҡшымбәт ауылы яҡ... Бындағы сельпо счетоводы Шәймәрҙәндең эше нисек икән? Өлгөрттөмө икән? Әллә ҡағылып китергәме? Ҡағылып киткәндә ярар ине ярауын, юл туҡтала. Шәймәрҙәндең ғәҙәтен яҡшы белә ул. Исәнлек-һаулыҡ һорашыу менән генә ебәрмәй инде ул.

Тура ат ҡапыл Яҡшымбәткә китә торған бәләкәй юлға боролдо. Ләкин Әхмәтхан ат ихтыярына бирелмәне, дилбегәне ныҡ ҡына тартып, оло юлға сығарҙы. Ул аҙымдар китмәне, үҙе үк ҡарға батыра-батыра атын Яҡшымбәт юлына кире уратып төшөрҙө.

— Әйҙә ҡағылайыҡ әле шунда, — тине ул атына.

Шәймәрҙән сельпоға тиклем банкыла, райфола ла эшләне. Эште белмәй тип булмай уны. Ләкин ватылмай, борсолмай, ҡабаланмай эшләүсән кеше ул Шәймәрҙән ағай. Тәнҡитте лә бик һалҡын ғына тыңлай. «Ярай» ти ҙә ҡуя. Райфола саҡта Әхмәтханды бер-ике тапҡыр ҡайһы бер формальностәр талап итеп аҙаплап та йөрөткәйне. Ауылға килеп кергәс Әхмәтхан ауыҙ эсенән генә:

«Ҡағылып китәйек әле», тине.

Шәймәрҙән өйөндә юҡ. Ҡапҡа төбөнә күлдәк өҫтөнән ҙур, һоро мамыҡ шәл ябынған бер ҡыҙ сыҡты ла һорағанды ла көтмәгәнсә:

— Атай сельпола, — тине.

— Әйҙә шунда киттек, — тине Әхмәтхан атына мөрәжәғәт итеп.

Ат сельпо канцелярияһына килеп етеү менән тәҙрә аша Шәймәрҙәндең йыуан, кейемен йыртып килгәндәй тулы кәүҙәһе күренде. Ҡаршы сыҡманы, тәҙрә аша ғына ҡулын болғап саҡырҙы.

— Әйҙә, Әхмәтхан туған!

Әхмәтхан толобоноң йәнле яғын эскә ҡалдырып санаға ырғытты ла, сельпо канцелярияһына уҙҙы. Шунда уҡ сана янына ап-аҡ бер кәзә килеп еткәйне, уны ла ҡыуып маташманы. Шәймәрҙән ултырған еренән генә күрешер өсөн уң ҡулын һуҙҙы, һул ҡулы счет төймәләрендә ҡалды һәм:

— Плашең бик яҡты күренә, отчет менәндер ахырыһы, — тине.

— Шулайыраҡ, ә һинең эш нисек?

Шәймәрҙән ҡалын елкәһе менән Әхмәтханға табан боролдо һәм бер ҙә иҫе китмәгән һымаҡ:

— Минеке иртәгә кисһеҙ бөтмәҫ ахырыһы — тине.

— Ни эшләп улай, үҙеңдең сельпоң минекенә ҡарағанда бәләкәй.

Шәймәрҙән яуапты түшәмдән эҙләне, ләкин унда бер төрлө яуап та юҡ ине. Әхмәтхан Шәймәрҙәнгә һөҙөп кенә ҡарап алды. Уның йөҙөндә, бер төрлө лә арығанлыҡ һиҙелмәй, хатта ул, киреһенсә, бик һимеҙ аштан һуң йоҡомһорап ултырған кешегә оҡшаған ине.

Әхмәтхан рөхсәт һорап тормаҫтан, пальтоһын сисеп сөйгә элде лә:

— Ярҙамлашырға буламы? Бер-ике сәғәт ултырып китәйем, — тине.

Улар бик ҡыҙыу эшкә тотондолар. Шәймәрҙән эше буталсыҡ түгел, бөтәһе лә үҙ тәртибе менән яҡшылап тегелгән. Нәмә генә һорамаһын леберҙәтеп килтерә лә сығара. Ҡағыҙҙар ҙа бик яҡшы, копировкалар ҙа асыҡ. Шуның өҫтөнә хәтере лә бик яҡшы икән. Бында Әхмәтханға өйрәнерлек әйберҙәр ҙә бик йыш осрай. Эш араһында улар тәжрибәләрен дә уртаҡлашып алалар. Бер сәғәт үтте, ике, өс... Тыштан бер уҡыусы малайы инеп:

— Ағай, атығыҙ тик тормай, — тине.

— Булмаһа, ҡустым, һин уның арҡалығын төшөрөп, алдына бесән һалып ҡуй әле, — тине Әхмәтхан. Шәймәрҙән бер Әхмәтханға, бер уҡыусы малайға ҡарап алды ла:

— Әллә беҙҙең ишек алдына илтеп туғараһыңмы? — тине.

Әхмәтхан счет төймәләрен тарта-тарта башын әйеп кенә ризалыҡ белдерҙе Шәймәрҙәнгә, канцелярия бик йылы булып киткәндәй булды. Костюменең бар төймәһен дә ысҡындырҙы, унан малайҙың башынан һыйпап:

— Һин, ҡустым, шулай ит инде. Хәҙер атты беҙҙең ишек алдына илтеп туғар. Еңгәңә әйт, атҡа бесән бирһен, ә беҙгә теш араһына ҡыҫтырырға аҙыраҡ ҡыты-мыты әҙерләһен. Берәй сәғәттән ҡайтырбыҙ тип әйттеләр тиген, йәме!

Малайға шул ғына кәрәк ине. Тиҙ генә сығып йүгерҙе. Бер ике минуттан:

— Ну, малҡаййй! — тип һыҙғырып ебәреүе лә ишетелде.

Ике счетовод тағы ла эшкә тотондо. Хәҙер инде улар бөтөнләй һөйләшмәйҙәр. Тик канцелярияла счет төймәләре генә сытылдай һәм уның тауышына риза булмаған кеүек стеналағы сәғәттең «тик ят! тик ят!» тигән һымаҡ бер ыңғайға ғына йөрөп тороуы ишетелә. Теге иртәнсәк ҡапҡа төбөндә осраған һәйбәт мамыҡ шәлле ҡыҙ бер тапҡыр сәйгә, икенсе тапҡыр ашҡа саҡырып килде, ләкин счетоводтар урындарынан ҡуҙғалманылар, тик баланы тынысландырыр өсөн, баштарын да күтәрмәйсә «хәҙер, хәҙер!» тип кенә ҡалдылар.

— Арьяғын үҙем дә бөтөрөрмөн инде, — тине Шәймәрҙән төш ауғас, — әйҙә ҡайтып ашап алайыҡ.

— Юҡ, башланған эш бөткән эш, бөтөрәйек, — тине Әхмәтхан.

Эште бөтөрөп ҡайтыуға Әхмәтхан менән Шәймәрҙәнде ишек алдындағы тура ат кешнәп ҡаршы алды, уның тамағы туйған, һыу эскеһе килә ине.

Өйрәк итe бешкән икән, бик тәмләп ашанылар.

III

— Аттың шәбен биргәндәр икән үҙеңә, — тине Шәймәрҙән иртәнге һалҡын һауала ауылды сығып киткәс. Улар иртәнсәк тә йылы аш менән тамаҡ туйҙырып алғандар, кәйеф яҡшы ине. Әхмәтхан шулай ҙа Шәймәрҙәндең был һүҙенә яуап бирмәне. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, шәп булғас шәп инде. Ҡара әле, уҡмашып ҡына юртып бара бит! Шәймәрҙәндең аттың үҙенең күңеленә ятырлыҡ һүҙ әйтәһе килә ине, атты маҡтау ғына ҡәнәғәтләндермәне. Ысынлап та, шәп атта ла насар кеше йөрөргә мөмкин булған кеүек, яҡшы атта ла насар кеше йөрөргә мөмкин бит әле. Шулай ҙа Әхмәтхандың рухын күтәрерлек, шул уҡ ваҡытта яһалма булмаған һүҙҙе таба алманы.

Улар район үҙәгенә барып еткәндә радио тап сәғәт туғыҙға сигнал бирҙе. Ат райсоюз алдына килеп туҡтаны.

Райсоюздың баш бухгалтеры Ишкилдин өҫтәл артынан бик ихлас ҡына күтәрелеп, ике счетовод менән шат күрешеп һәм икәүһенә лә ултырырға урын күрһәтте.

— Отчет менәндер, — тине ул башта Әхмәтханға, унан аҙ ғына тартылыбыраҡ ултырған Шәймәрҙәнгә ҡарап:

— Эйе, — тип дөрөҫләне Әхмәтхан.

Ишкилдин стеналағы календарға ҡарап алды ла тағы ла Әхмәтханға табан боролдо.

— Мин һинең алдан киләсәгеңде белгәйнем, ләкин, дөрөҫөн әйтәйем, Шәймәрҙән тураһында шикләнә инем. Был булғас һеҙ шахматсылар кеүек берәмселекте икәүләп бүлештегеҙ. Әллә мин әйтәм, Әхмәтхан, дәртләндереү йөҙөнән беренселекте Шәймәрҙәнгә бирәбеҙме?

— Мин ҡаршы түгел, — тине Әхмәтхан.

Шәймәрҙәндең һимеҙ битенә тир бәреп сыҡты, ул бик уңайһыҙланды, шулай ҙа бая уйлаған йылы һүҙҙе Ишкилдин алдында әйтә алыуына ҡыуанып та ҡуйҙы.

— Көнө буйына Әхмәтхан ярҙам итеп шулайыраҡ килеп сыҡты шул, — тине Шәймәрҙән, был һүҙҙән һуң уға еңел булып китте.

Редактор **Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.**

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, информация һәм совет төҙөлөшө бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02422

Өфөнөң газеталары издательствоһы типографияһы.

Тиражы 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

32-се йыл сыға. 1951 йыл № 66 (8783) 4 апрель шаршамбы

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин

Башҡортостан нефтселәре ҡалаһы — Октябрьскийға иртәгә биш йыл тула.

Башҡорт АССР-ы нефтселәре иптәш Сталинға яҙған хаттарында быйыл нефть сығарыуҙы, үткән йылға сағыштырғанда, 22.4 процентҡа арттырырға һәм планнан тыш күп меңдәрсә тонна нефть бирергә йөкләмә алдылар, улар бораулау планын срогынан алда үтәйәсәктәре, бораулау тиҙлеген арттырасаҡтары тураһында белдерәләр.

Нефтселәргә — коммунизмде актив төҙөүселәргә дан!

АГИТАЦИОН-МАССОВЫЙ ЭШТЕ АРТАБАН КӨСӘЙТЕРГӘ

Республикабыҙҙың промышленность предприятиеләре алдында 1951 йылда продукция етештереүҙе һан һәм сифат яғынан артабан үҫтереү буйынса ҙур бурыстар тора. Был бурыстар техниканы һәм резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу, хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү юлы менән хәл ителергә тейеш.

Күптән түгел Башҡортостан нефть промышленносеның работниктәре 1951 йылдың производство планын срогынан алда үтәү буйынса үҙ өҫтәренә мөһим йөкләмәләр алып иптәш Сталинға хат менән мөрәжәғәт иттеләр. Һәр бер нефтсенең бурысы [illegible] иптәш Сталинға биргән вәғәҙәләрҙе [illegible] хеҙмәте менән үтәүҙе тәьмин итеүҙән тора. [illegible] бөтә эшселәр, инженер-техник работниктәр, хеҙмәткәрҙәр — бөтә совет кешеләре [illegible] хеҙмәт менән [illegible].

Хеҙмәтсәндәрҙең ижади активлеге, бөтәһенән элек, уларҙың аңлылыҡ кимәленә, уларҙың дөйөм халыҡ интерестарын аңлауҙарына бәйләнгән. Массаларҙың аңлылығы Совет государствоһының ҡеүәтле сығанағы булып тора.

Хеҙмәтсәндәр коммунистик аңлылығын күтәреүҙә, уларҙың көсөн практик бурыстарҙы үтәүгә туплауҙа большевистик агитацияның әһәмиәте ҙур. «...Агитация һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә, — тип әйтә иптәш Сталин, — партияның төп эштәренең береһе булып тора».

Республикабыҙҙың промышленность һәм транспорт предприятиеләрендә партияның һәм [illegible] 21 меңдән артыҡ агитатор эшләй. Ошо агитаторҙарға таянып, бик күп предприятиеләрҙәге партия ойошмалары агитацион-массовый эште күтәрелеш һәм государство пландарын уңышлы үтәүҙе тәьмин иттеләр.

Ләкин, шуны ла әйтергә кәрәк, партияның ҡайһы бер ойошмалары агитацион-массовый эштең әһәмиәтен баһалап еткермәйҙәр, политик-агитацияға [illegible]. Агитаторҙар [illegible] Октябрьский [illegible] исемендәге Өфө аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһының [illegible] агитаторҙар эшсәләр араһында бәседәләрҙы бик һирәк үткәрәләр.

Күп кенә урындарҙа партия ойошмалары агитаторҙарҙың семинарҙарын бик һирәк һәм түбән кимәлдә үткәрәләр. Өфө паровоз ремонтлау заводындағы агитаторҙар былай тиҙәр: «Беҙгә менән инструктив кәңәшмәләр һәм семинарҙар үткәрмәйҙәр, газета уҡыуҙы, тип кенә ҡуялар. Ә шундай мәсьәләләр ыҡтыра, [illegible]». Агитаторҙарға [illegible] идея-политик кимәлдә, конкрет, практик бурыстарҙы [illegible]. Партия ойошмалары агитаторҙарҙы етәкселектә [illegible] уларҙың [illegible] идея-политик кимәлен күтәреү, уларға төрлө бәседәләрҙың темалары буйынса инструктаж үткәреү талап ителә.

Эшсе һәм хеҙмәткәрҙәрҙең дөйөм йыйылыштары хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләү эшендә бик ҙур әһәмиәткә эйә. [illegible]

Бөтә кеше иптәшен боевой агитация булып торған большевистик агитация бөтә [illegible] ҡыҫҡаса [illegible] капиталиҙм ҡалдыҡтарына ҡаршы көрәшкә хеҙмәт итә. [illegible]

Республикабыҙҙың промышленность предприятиеләрендә май алды социалистик ярышы киң йәйелдерелде. Предприятиеләр, цехтар, бригадалар, айырым эшселәр күтәренке йөкләмәләр алдылар. Ләкин йөкләмәләр алыу эштең башланғысы ғына әле ул. Бурыс — алған йөкләмәләрҙе үтәүҙән тора. Тик был нигеҙҙә ныҡышмалы массовый-политик һәм ойоштороу эштәре менән генә алынған йөкләмәләрҙең үтәлеүенә өлгәшергә мөмкин.

Бөгөн промышленность предприятиеләре һәм транспорт агитаторҙарының республика кәңәшмәһе асыла. Был кәңәшмәлә ҡатнашыусылар промышленность предприятиеләрендә һәм транспортта агитацион-массовый эштең торошон тикшерәсәк.

Промышленность предприятиеләрендәге һәм транспорттағы партия ойошмалары агитацион-массовый эштә булған етешһеҙлектәрҙе бөтерергә һәм эшселәр, инженер-техник работниктәр, хеҙмәткәрҙәр араһында бөтә төр, йөкмәткеле политик агитацияны йәйелдереүҙе тәьмин итергә, шуның менән уларҙың коммунистик төҙөлөш эшендә ижади активлектәрен үҫтереүгә булышлыҡ итергә бурыслылар.

Бөтә Союз Коммунистәр (большевиктәр) партияһы Үҙәк Комитетенән һәм ССР Союзы Министрҙәр Советенән

Большевиктәр партияһының һәм Совет государствоһының иң ҡарт деятелдәренән береһе, хеҙмәтсәндәр эше өсөн фиҙакәр көрәшсе, ВКП(б)-ның Үҙәк Ревизия Комиссияһының Председателе, ССР Союзы Верховный Советы депутаты иптәш Михаил Федорович **Владимирскийҙең** оҙаҡ дауам иткән ҡаты ауырыуҙан һуң, 2 апрелдә иртән сәғәт 9-ҙа үлеүе тураһында Бөтә Союз Коммунистәр (большевиктәр) партияһының Үҙәк Комитеты һәм ССР Союзы Министрҙәр Советы тәрән ҡайғы менән хәбәр итә.

Үҙенең бөтә ғүмерен бөйөк коммунизм эшенә арнаған һәм бөтә кеше халыҡ бәхете хөрмәтенә биргән иптәш **М. Ф. Владимирскийҙең** үлеүе коммунистәр партияһы һәм совет халҡы өсөн ауыр юғалтыу булып тора.

Бөтә Союз Коммунистәр (большевиктәр) партияһы Үҙәк Комитеты.

ССР Союзы Министрҙәр Советы.

Ленинград ҡалаһы

Киров заводы

Завод директоры иптәш СМИРНОВҠА
Заводтың баш инженеры иптәш ЗАХАРЬИНГӘ
ВКП(б) Үҙәк Комитетенең парторгы иптәш СМИРНОВҠА
Завком председателе иптәш БОГДАНОВҠА
ВЛКСМ Үҙәк Комитетенең комсоргы иптәш КОРСАКОВҠА

Киров (элекке Путилов) заводына 150 йыл тулыу һәм заводтың Ленин ордене менән наградланыуы айҡанлы эшселәр, эшсе ҡатын-ҡыҙҙар, инженерҙар, техниктар һәм хеҙмәткәрҙәр коллективын ҡотлайым һәм тәбрик итәм.

Илебеҙҙең иң боронғо заводтарынан береһе булған Киров заводы рус эшселәр синыфының революцион нәҫелендә, Совет власын ныҡлауҙа һәм Тыуған илебеҙҙең хужалыҡ һәм оборона ҡеүәтен нығытыуҙа тарихи роль уйнаны.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуң завод коллективы заводты алғы сафҡа бастырыуҙа һәм халыҡ хужалығы өсөн иң мөһим продукция етештереүҙә үҙләштереүҙә ҙур уңыштарға өлгәште.

Кировсы иптәштәр, партия һәм хөкүмәт заданиеларын үтәү буйынса һеҙҙең эшегеҙҙә артабан уңыштар теләйем.

И. СТАЛИН.

СССР Транспорт машиналары төҙөү министерствоһының Ленинград ҡалаһында Киров исемендәге Ленин орденле, Ҡыҙыл Байраҡ орденле һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы орденле заводын Ленин ордене менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы УКАЗЫ

Тыуған ил һәм совет халҡы алдында күренекле хеҙмәттәре өсөн һәм нигеҙ һалыныуына 150 йыл тулыу айҡанлы СССР Транспорт машиналары төҙөү министерствоһының Ленинград ҡалаһындағы Киров исемендәге (элекке Путилов) Ленин орденле, Ҡыҙыл Байраҡ орденле һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы орденле заводын Ленин ордене менән наградларға.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль.
1951 йыл, 2 апрель.

Октябрьский ҡалаһының промышленность, төҙөлөш, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау һәм партия-совет работниктәрен Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Почет грамоталары менән наградлау тураһында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы УКАЗЫ

1951 йылдың 5 апрелендә Октябрьский ҡалаһының төҙөлөүенә 5 йыл тулыу айҡанлы һәм нефтселәрҙең яңы ҡалаһын төҙөүҙә өлгәшелгән уңыштар өсөн Октябрьский ҡалаһының промышленность, төҙөлөш, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау һәм партия-совет органдарында эшләүсе айырыуса күренекле работниктәрен Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Почет грамоталары менән наградларға:

1. **Әбделрәшитов** Әлимйән Бәҙретдин улын — «Туймазынефть» тресы 2-се номерле бораулау контораһының тимерлек цехы мастерын.
2. **Александров** Константин Максимовичты — «Башнефтепромстрой» тресы 2-се номерле төҙөлөш-монтаж управлениеһы начальнигын.
3. **Әхмәтшәрипов** Әхмәтзәки Әхмәтшәрип улын — Горпищепромкомбинаттың кондитер цехы мастерын.
4. **Бағрәмов** Ғимран Мәүлют улын — хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала Советы исполкомының секретарын.
5. **Белялдинов** Ҡасим Билал улын — «Туймазыбурнефть» тресының 2-се номерле бораулау контораһының бораулау мастерын.
6. **Варданов** Александр Афанасьевичты — «Туймазынефть» тресы скважиналарҙы капиталь ремонтлау контораһының бораулау мастерын.
7. **Варзин** Федор Фомичты — Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһының торлаҡ-коммуналь контораһы механигын.
8. **Власов** Сергей Григорьевичты — Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһының начальнигын.
9. **Ғәбдрәхимов** Вәгиз Ғәбдрәхим улын — «Туймазыбурнефть» тресы 1-се номерле бораулау контораһының бораулаусыһын.
10. **Ғәлиев** Ғәбдрәхман Хәйрулла улын — «Башзападнефтеразведка» тресының бораулау мастерын.
11. **Галонский** Павел Петровичты — «Туймазынефть» тресының управляющийын.
12. **Ғәйнетдинова** Мөкәрәмә Камалетдин ҡыҙын—«Туймазынефть» тресы 4-се номерле нефть промыслаһының операторын.
13. **Герасимов** Николай Георгиевичты — ВКП(б) ҡала комитетенең бүлек мөдирен.
14. **Ғибадуллин** Ғәбделхәй Миңнулла улын — Сталин исемендәге артелдең күн эшкәртеү мастерын.
15. **Григоренко** Николай Кузьмичты — «Туймазынефть» тресының капиталь төҙөлөш управлениеһы начальнигын.
16. **Ғүмәров** Хәжи Зиннәтулла улын — Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһының 1-се номерле төҙөлөш управлениеһы столяр-бысласыһын.
17. **Домнина** Антонина Прокофьевнаны — «Туймазынефть» тресының 1-се номерле нефть промыслаһы операторын.
18. **Добрякова** Надежда Васильевнаны — «Туймазынефть» тресы коммуналь контораһының коновозчигын.
19. **Дубинин** Константин Тимофеевичты — «Центроспецстрой» тресы 5-се номерле төҙөлөш-монтаж управлениеһының экскаваторщигын.
20. **Жданов** Анатолий Михайловичты — «Туймазынефть» тресы контурлап һыу ебәреү контораһының баш инженерын.
21. **Заһиров** Рәүеф Әбделхаҡ улын — хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала Советы исполкомы председателен.
22. **Зимин** Михаил Ефимовичты — ҡала мәғариф бүлеге мөдирен.
23. **Золоев** Татаркан Магометовичты — «Туймазынефть» тресының баш геологын.
24. **Кислова** Валентина Константиновнаны — «Туймазынефть» тресы контроль-үлсәү приборҙары контораһының техник-вычислителен.
25. **Колпаков** Василий Ивановичты — Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһының 3-сө номерле төҙөлөш управлениеһының өлкән прорабын.
26. **Корольков** Василий Герасимовичты — ВКП(б) ҡала комитетенең секретарын.
27. **Кучеровский** Петр Гавриловичты — «Башзападнефтеразведка» тресының бораулау мастерын.
28. **Михайленко** Александр Георгиевичты — «Туймазынефть» тресы 1-се номерле нефть промыслаһы токарын.
29. **Можалин** Николай Яковлевичты — хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала Советы исполкомы председателенең урынбаҫарын.
30. **Мөхәмәтшин** Бикмөхәмәт Мөхәмәтша улын — «Туймазынефть» тресының 2-се номерле нефть промыслаһы операторын.
31. **Немцов** Александр Степановичты — горместпром комбинатының столярын.
32. **Потюкаев** Михаил Алексеевичты — «Башзападнефтеразведка» тресы управляющийын.
33. **Пляскин** Владимир Владимировичты — ВКП(б) ҡала комитетенең бүлек мөдирен.
34. **Резчиков** Борис Викторовичты — ВЛКСМ-дың ҡала комитеты секретарын.
35. **Сәлахов** Рәй Сәлах улын — «Туймазынефть» тресының коммуналь контораһының мейес сығарыусыһын.
36. **Сарычев** Николай Николаевичты — ВКП(б) ҡала комитетенең элекке секретарын, хәҙер Башҡорт АССР-ы Госпланы председателе булып эшләй.
37. **Сәйдекова** Наннот Келимулла ҡыҙын — 4-се номерле башланғыс мәктәп уҡытыусыһын.
38. **Тадэйко** Евгений Ивановичты — «Туймазынефть» тресы 1-се номерле нефть промыслаһы эргәһендә ВКП(б) Үҙәк Комитетенең парторгын.
39. **Урманова** Суфия Кәрим ҡыҙын — «Туймазынефть» тресы капиталь төҙөлөш управлениеһының инженерын.
40. **Фазлыева** Мәрйәм Хәбиб ҡыҙын — Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһының 2-се номерле төҙөлөш управлениеһы штукатурын.
41. **Филиппова** Мария Алексеевнаны — медицина-санитария бүлеге больницаһының терапия бүлеге мөдирен.
42. **Флоров** Евгений Ивановичты — 1-се номерле урта мәктәп уҡытыусыһын.
43. **Фролова** Татьяна Алексеевнаны — ҡала һаулыҡ һаҡлау бүлеге мөдирен.
44. **Хәкимов** Әсхәт Исхаҡ улын — Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһының баш инженерын.
45. **Хәликов** Мәсғүт Хәбибрахман улын — ВКП(б) ҡала комитеты секретарын.
46. **Харисов** Ғәләмгир Харис улын — ВКП(б) ҡала комитетенең бүлек мөдирен.
47. **Хоптар** Феодосий Степановичты — «Нефтезаводмонтаж» тресының 10-сы номерле монтаж управлениеһы котельщиктәренең бригадирын.
48. **Храмов** Константин Филипповичты — Башҡорт АССР-ы Государство имуществоһы министерствоһының Октябрьский ҡала бүлеге начальнигын.
49. **Хөснөтдинов** Зия Хөснөтдин улын — «Туймазынефть» тресы 2-се номерле нефть промыслаһының мастер ярҙамсыһын.
50. **Чирков** Николай Георгиевичты — Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһының 2-се номерле төҙөлөш управлениеһы начальнигын.
51. **Чипарова** Елизавета Степановнаны — ҡала больницаһының терапия бүлеге мөдирен.
52. **Щитова** Екатерина Петровнаны — ВКП(б) ҡала комитеты секретарын.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретаре вазифаһын үтәүсе И. ЙӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы, 31 март, 1951 йыл.

СССР Министрҙәр Советендә

СССР Министрҙәр Советы ВКП(б)-ның Үҙәк Ревизия Комиссияһы Председателе иптәш М. Ф. Владимирскийҙе күмеүҙе ойоштороу буйынса түбәндәге иптәштәр составында Хөкүмәт комиссияһы төҙөргә ҡарар итте: М. А. Суслов (Председатель), М. Ф. Шкирятов, П. Н. Поспелов, А. Ф. Горкин, С. Д. Игнатьев, Н. И. Румянцев һәм Д. В. Крупин.

НЕФТСЕЛӘР ҠАЛАҺЫ — ОКТЯБРЬСКИЙҒА БИШ ЙЫЛ

Республикабыҙ нефтселәренең иң йәш ҡалаһы — Октябрьскийға иртәгә биш йыл тула.

Октябрьский ҡалаһының барлыҡҡа килеүе һәм ҡыҙыу темп менән үҫеүе һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта республикабыҙҙың нефть промышленносеның үҫеш тарихы ул. Большевиктәр партияһының, Совет хөкүмәтенең һәм иптәш Сталиндең даими хәстәрлеге арҡаһында донъяла иң алдынғы техника менән ҡоралланған Башҡортостандың нефть промышленносе йылдам үҫә. 1950 йылда республикала нефть сығарыу, 1946 йыл менән сағыштырғанда, ике ярым тапҡырға артты. Ошо уҡ осор эсендә бораулау эштәре 3,3 тапҡырға, төҙөлөш эштәре 6,5 тапҡырға артты. Хәҙер нефть промышленносе республикабыҙҙың төп промышленность тармағына, ә Башҡортостан «Икенсе Баку»ҙың үҙәгенә әйләнде.

Октябрьский ҡалаһының нефть промыслалары айырыуса ҡыҙыу темп менән үҫәләр. Биш йыл эсендә, «Туймазынефть» тресында нефть сығарыу өс тапҡырҙан күберәккә артты. Ҙур үҫеш һөҙөмтәһендә биш йылда нефтселәрҙең матур, төҙөкләндерелгән ҡалаһы — Октябрьский барлыҡҡа килде. Ҡалала яңы промыслалар, бораулау конторалары, төҙөлөш ойошмалары, заводтар барлыҡҡа килделәр. Тик һуңғы өс йыл эсендә генә лә ҡалала 100 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны, яңы 12 мәктәп бинаһы, 16 медицина учреждениеләре бинаһы, ураҡлаған культура һәм көн-күреш учреждениеләре төҙөлделәр. Ҡала урамдары асфальтландырыла, ағастар ултыртыла, парктар, скверҙар, спорт майҙандары төҙөлә.

Хәҙер ҡалала 14 мәктәп, эшсе йәштәренең 3 кискe мәктәбе, пионерҙар йорто, 4 клуб, 3 ҡала библиотекаһы һәм бер нисә профсоюз библиотекаһы эшләй.

Ҡаланы газификациялау эштәре киң ҡолас алды. Коммуналь йорттар, мәктәптәр, больницалар, культура һәм көн-күреш учреждениеләренең бинаалары газ менән йылытыла.

Ҡала халҡын культура һәм тормош яғынан хеҙмәтләндереү эше йылдан-йыл яҡшыра. Большевиктәр партияһының һәм Совет хөкүмәтенең даими хәстәрлеге арҡаһында Октябрьский ҡалаһы үҫә, киңәйә һәм төҙөкләндерелә.

Большевиктәр партияһының, Совет хөкүмәтенең даими хәстәрлегенә Октябрьский нефтселәре стахановсы эш менән яуап бирәләр. Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Куприянов, алдынғы бораулаусылар Ҡ. Белялдинов, П. Усов, йөк менсе шофер Б. Ихтисамов, стахановсы-штукатурҙар Е. Модина, М. Фазлыева, күренекле нефтселәр Е. Варенов, М. Хәсәнов, Б. Мөхәмәтшин иптәштәр үҙҙәренең стахановсы эштәре менән дан яулап алдылар.

Октябрьский нефтселәре өлгәшелгәндәр менән генә сикләнеп ҡалмайҙар. Улар социалистик Ватаныбыҙҙың экономик ҡеүәтен артабан нығытыу өсөн яңынан-яңы уңыштар яулап алыу өсөн көрәшәләр.

Октябрьский нефтселәре, бөтә Башҡортостан нефтселәре менән бергә, Иптәш Сталин тарафынан илебеҙҙең нефтселәре алдына ҡуйылған бөйөк бурысты—йылына 60 миллион тонна нефть сығарыу бурысын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшәләр. Үткән йылда республикабыҙҙың нефтселәре иптәш Сталинға биргән вәғәҙәләрен, Азербайжан нефтселәре менән социалистик ярышта алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәнеләр. Улар 1950 йылда, 1949 йыл менән сағыштырғанда, нефть сығарыуҙа 30 процентҡа, бораулауҙа — 20,7 процентҡа, төҙөлөштә — 49,5 процент үҫеш бирҙеләр.

Нефтселәр быйыл тағы ла күтәренкерәк йөкләмәләр алдылар. Улар иптәш Сталинға яҙған хатында, Азербайжан һәм Куйбышев өлкәһе нефтселәрен ярышты дауам иттерергә саҡырып, 1951 йылдың планын срогынан алда үтәргә, нефть сығарыу кимәлен 22,4 процентҡа арттырырға, пландан тыш күп меңдәрсә тонна нефть бирергә һүҙ бирҙеләр.

Нефтселәрҙең эштәре һүҙҙәренән айырылмай. Улар быйыл тағы ла яҡшыраҡ эшләйҙәр, бөтә резервтарҙы нефть сығарыуҙы, бораулауҙы арттырыу, төҙөлөш эштәренең темпын күтәреү өсөн файҙаланалар. Республикабыҙ нефтселәренең был көрәшендә Октябрьский нефтселәре алдынғы сафта баралар.

Нефтселәр алдында тағы ла ҙурыраҡ бурыстар тора. Бораулау эшен яҡшыртырға, нефть скважиналарын бораулауҙың планын бөтә промыслаларҙа ла тулыһынса һәм арттырып үтәүгә өлгәшергә кәрәк. Төҙөлөш эштәренең темпын тағы ла күтәреү, төҙөлөштең үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, промыслаларҙағы һәм төҙөлөш ойошмаларындағы бай техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуға өлгәшеү, хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан үҫтереүҙә эске мөмкинлектәрҙе табыу һәм уларҙы бөтә технико-экономик күрһәткестәрҙе яҡшыртыу өсөн файҙаланыу — Башҡортостан нефтселәренең иң мөһим бурыстары булып тора.

Республикабыҙҙың нефтселәре, шул иҫәптән Октябрьский нефтселәре иптәш Сталинға яҙған хаттарында ҙур йөкләмәләр алдылар. Шик юҡ, улар бөйөк Сталинға биргән һүҙҙәрен намыҫ менән үтәйәсәктәр, быйыл тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшәсәктәр.

Октябрьский нефтселәре үҙҙәренең йәш ҡалаһының юбилейен ҙур производство активлеге менән ҡаршылайҙар. Нефтселәр коллективының май алды социалистик ярышында Октябрьский нефтселәре алдынғы сафта баралар һәм бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең бөйөк байрамын 1951 йылдың дүрт айлыҡ планын срогынан алда үтәү менән ҡаршылау өсөн көрәшәләр.

Производство заданиеларын үтәү өсөн көрәштең алдынғы сафында барыусы Октябрьский нефтселәренә дан!

Ҡар һыуҙары тотоу, ер тырматыу эштәре башланды

Учалы. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Быйыл районда яҙ бик иртә килде. Хәҙер колхоз баҫыуҙарында ҡар һыуҙары тотоу, өлгөргән участкаларҙы һайлап тырматыу эштәре башланды. Сталин исемендәге колхозда иптәш Диниславов бригадаһы баҫыуға беренсе булып сыҡты. Бригада тәүге көндә үк 60 гектар майҙанда ҡар һыуы тотоу үткәрҙе. Ә икенсе көндә бөтә бригадалар ҙа баҫыуға сыҡтылар. Ике көн эсендә был колхозда 1000 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо.

Учалы МТС-ы хеҙмәтләндергән «Октябрь», «Йыйыҡ», «Ҡыҙыл партизан» ауыл хужалығы артеле члендәре лә яҙғы баҫыу эштәренә сыҡтылар. «Ҡыҙыл партизан» колхозында ҡар һыуҙары тотоу менән бергә, өлгөргән ерҙәрҙе һайлап тырматып төштәләр.

Байрамғол МТС-ы зонаһындағы Ленин, Ворошилов исемендәге колхоздарҙа ла баҫыу эштәре көндән-көн киңәйә бара. Ленин исемендәге колхозда трактор бригадаһы тәүге көндә 80 гектар ер тырматты. Был колхозда ҡайһы бер бригадаларҙа шулай уҡ өлгөргән участкаларҙы аттар менән тырматыу эштәре лә башланды.

Октябрьский—нефтселәр ҡалаһы,

Сталинса гениаль план буйынса илебеҙҙең Көнсығышында һуғыштан алдағы биш йыллыҡтар йылдарында яңы нефть базаһы — «Икенсе Баку» төҙөлдө, ул ҡеүәтле, йылдам үҫеүсе промышленность үҙәгенә әйләнде. «Икенсе Баку» үҙәгенең күренекле йәш ҡалаһы Октябрьскийға иртәгә биш йәш тула. Башҡортостан нефтселәре үҙҙәренең ҡалаһы юбилейен ҙур уңыштар менән ҡаршылайҙар.

Ошо юбилей айҡанлы газетабыҙҙың бөгөнгө номерында нефтселәрҙең фиҙакәр хеҙмәтен һәм культуралы тормошон күрһәтеүсе материалдар баҫып сығарабыҙ.

ҺАНДАР ҺӨЙЛӘЙ

Биш йыл эсендә нефть сығарыу кимәле 3,3 тапҡырға артты.

* * *

1950 йылдың аҙағында, 1946 йыл менән сағыштырғанда, абсолют бораулау өс тапҡырға артты. Ә турбин ысулы менән бораулау 7 тапҡыр самаһы артты.

* * *

Биш йыл эсендә ҡалала бик күп торлаҡ йорттары төҙөлдө. Уларҙың майҙаны 100 мең квадрат метрҙан күберәк.

* * *

1948 йылда Октябрьский ҡалаһында газопроводтар төҙөү эше башланды. Хәҙер магистраль газопроводтарҙың оҙонлоғо 22 километрға етә.

* * *

Ҡалала сауҙа селтәре йылдан-йыл киңәйә бара. 1946 йылда бөтәһе 31 сауҙа точкаһы булһа, 1950 йылдың аҙағында улар 106-ға етте.



«Туймазынефть» тресы коллективында май алды социалистик ярышы киң йәйелдерелде. Нефтселәр үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәрен бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе срогынан алда үтәүгә йүнәлдерҙеләр.

Һүрәттә (һулдан уңға): 1. Икенсе номерлы промыселдың стахановсы нефтселәре (һулдан уңға): оператор В. С. Алексеева, оператор В. П. Щербакова, өлкән инженер Н. С. Штурбина һәм оператор Т. Н. Жигалова иптәштәр. 2. Беренсе номерлы промыселдың өсөнсө участкаһы мастеры иптәш Ш. М. Мөхәмәтшин. 3. Өсөнсө номерлы промыселдың комсомолец-йәштәр бригадаһы бригадиры иптәш М. С. Чигирева. 4. Икенсе номерлы промысла операторы иптәш Т. К. Хәйруллина эш өҫтөндә.

А. Червинский фотоһы.

Октябрьский ҡалаһының 7-се кварталында яңы торлаҡ йорттары төҙөлә.

Һүрәттә (һулдан уңға): йәш стахановсы ташсылар З. Фәррәхов, М. Осипов иптәштәр йорт төҙөү эшендә. Улар көндәлек нормаларын 170 процентҡа үтәйҙәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

ОКТЯБРЬСКИЙ ҠАЛАҺЫ—СОВЕТ ХАЛҠЫ ДУҪЛЫҒЫНЫҢ ГҮЗӘЛ ЕМЕШЕ

Иртәгә, 5 апрелдә, Туймазы нефтселәре Октябрьский ҡалаһының биш йыллығын билдәләйәсәктәр.

Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә, бөйөк рус халҡының туғандарса ярҙамында Октябрьский ҡалаһы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә законлы рәүештә «Икенсе Баку» үҙәге булып әүерелде. Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың тәүге айҙарында барлыҡҡа килгән был ҡала, биш йыллыҡтың һуңғы йылдарында танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Элек мәңге ҡыраҡ ҡалала күп ҡатлы биналар, асфальт менән түшәлгән юлдар төҙөлдө, парктар һәм скверҙар барлыҡҡа килде.

Октябрьский ҡалаһын төҙөүҙә бөтә совет халҡы ҡатнашты. Уны төҙөүселәрҙе илебеҙҙең эре промышленность предприятиелары юғары совет техникаһы менән тәьмин иттеләр. Унда Горький һәм Минск автомашиналары, Челябе һәм Харьков тракторҙары ҡатнашлыҡ иттеләр. Урал төҙөлөш материалдары менән тәьмин итеп торҙо. Баку, Москва эшселәре бораулау оборудованиелары ебәрҙеләр. Был эшкә бура ла ҡала күп айырмаһыҙ тиҙлек менән үҫте, уралды һәм матурланды.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың тәүге көндәренән үк камиллаштырылған совет техникаһы менән ҡоралландырылған Октябрьский нефтселәре биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн көрәшкә күтәрелделәр. Социалистик ярышты киң йәйелдереү һәм алдынғы новаторҙар методын киң ҡулланыу һөҙөмтәһендә нефтселәр коллективы үткән биш йыл эсендә ҙур уңыштарға өлгәште. Нефть сығарыу, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 3,3 тапҡырға артты. Нефть сығарыу буйынса биш йыллыҡ план 4 йылда үтәлде. Дөйөм алғанда, Туймазы нефтселәре бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта алған үҙҙәренең социалистик йөкләмәләрен намыҫ менән үтәнеләр.

Октябрьский хеҙмәтсәндәре государство пландарын срогынан алда үтәү, ҡаланы төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса ҙур политик активлек, хеҙмәт күтәренкелеге һәм ижади рухланыу менән эшләйҙәр. Бының ҡалабыҙ дүрт новаторына Сталин премияһы лауреаты исеме бирелеү айырыуса асыҡ күренә.

Ҡалала үҫкән меңдәрсә стахановсылар нефть сығарыуҙа һәм бораулауҙа ғәйәт ҙур хеҙмәт ҡаһарманлығы күрһәтәләр. Улар яңы техниканы үҙләштереп, уны тулыһынса файҙаланыуҙың юғарылыҡ өлгөләрен күрһәтәләр.

Октябрьский нефтселәре тиҙләтелгән метод менән бораулау мастеры Социалистик Хеҙмәт Геройы, Сталин премияһы лауреаты Куприянов, тиҙләтелгән метод менән бораулау мастеры Белиндилов, участка мастерҙары Хәсәнов, Мөхәмәтшин, штукатур Фазлыева, маляр Зарипов һәм башҡа бик күп алдынғы новаторҙар менән дан ҡаҙандылар. Һәр бер бораулау конторалары, цехта, промыселда, участкала бындай социалистик ярыш алдынғылары һәм инициаторҙары бар.

Быйыл ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитеты «Туймазыбурнефть» тресында бораулау тиҙлеген арттырыуҙа айырыуса ҙур эшмәкәрлек алып бара. Ул бораулаусылар араһында агит-массовый эште тейешле юғарылыҡҡа ҡуйҙы, улар менән ныҡыраҡ эшләй башланы. Һөҙөмтәлә, бораулаусыларҙың хеҙмәт етештереүсәнлеге байтаҡ күтәрелде, бораулау тиҙлеге артты. Бик күп бораулау бригадалары үҙҙәренең производство пландарын үтәүгә өлгәштеләр.

Ҡала үҫә. Уның менән бергә кадрҙары ла үҫә. Элекке ғәҙәти эшсе иптәш Фәтхетдинов хәҙер цех начальнигы. Элекке бораулау мастеры иптәш Балабанов хәҙер бораулау конторалары директоры булып эшләй. Бындай миҫалдарҙы тағы ла бик күп килтерергә мөмкин.

Октябрьский нефтселәре Тыуған илебеҙгә фиҙакәр хеҙмәт итеү менән бергә, үҙҙәренең идея-политик һәм техник кимәлдәрен күтәреү буйынса ла ныҡышмалы көрәшәләр. Профессиональ, политик, культура кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә эшләү нефтселәр тормошонда органик өлөш булып әүерелде. Улар стахановсылар мәктәбендә, махсус уҡыу комбинаттарында, мастерҙарҙың квалификацияларын күтәреү курстарында уҡыйҙар. Шуныһы характерлы, уҡыу программаһын тамамлағас та, улар үҙ белемдәрен күтәреү өҫтөндә эшләүҙе дауам итәләр. Соңғы белемеңде күтәрмәй тороп хеҙмәттә яңы уңыштарға өлгәшеп булмай.

Республикабыҙҙың нефть промышленносе эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре күптән түгел бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ эсендә үҙҙәренең өлгәшкән уңыштары тураһында рапорт бирҙеләр һәм 1951 йылға социалистик йөкләмәләр алдылар. Был йөкләмәлә нефть сығарыу кимәлен, 1950 йылда фактик өлгәшелгәнгә ҡарағанда, 22,1 процентҡа арттырыу һәм 1951 йылға билдәләнгән пландан тыш күп меңдәрсә тонна нефть биреү тураһында әйтелә. Шулай уҡ улар эксплуатацион, еренбус һәм разведка бораулауы пландарын үтәүҙе мөһим бурыс итеп ҡуйҙылар.

Хәҙер Октябрьский нефтселәре, бөйөк юлбашсыбыҙға биргән был вәғәҙәне үтәү буйынса бөтә предприятиеларҙа ла май алды ярышын йәйелдереп, юғары производство күрһәткестәренә өлгәшәләр.

Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә биш йыл эсендә өлгәшелгән уңыштар бик күп. Ләкин алда тағы ла яуаплыраҡ һәм ҡатмарлыраҡ бурыстар тора.

Октябрьский нефтселәре, ҡаланың биш йыллыҡ юбилейен билдәләп, большевиктар партияһы, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин тирәһенә тағы ла ныҡыраҡ тупланалар, коммунизм төҙөүҙең сталинсе программаһын үтәү өсөн көрәштә яңынан-яңы еңеүҙәр яулап алыу юлдарын билдәләйҙәр.

М. Халиков,

ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитеты секретаре.

Мин ҡала менән бергә үҫтем

Мин, ябай ауыл ҡыҙы, 1946 йылда Октябрьский ҡалаһына килеп, оператор ярҙамсыһы булып эшкә керҙем. 12 көндән һуң мин оператор инем инде. Был ваҡытта ҡаланың нигеҙе генә һалына башлағайны әле. Минең теләгем Тыуған илгә мөмкин тиклем күберәк нефть биреү ине. Күп тә үтмәй мин стахановсылар рәтенә баҫтым.

1948 йылда ҡала танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Элекке бер ни булмаған урында күп ҡатлы матур биналар, мәктәптәр, киң урамдар барлыҡҡа килде. Был йылда мине ВЛКСМ-дың ҡала комитеты пионер вожатыйы итеп, мәктәпкә күсерҙе. Мин инде ата-әсәм үлгәндән һуң яңғыҙ-ҡалған Әнисә түгел, ә минең иң яҡын туғандарым, дуҫтарым булған 280 пионер бар ине.

1950 йылда быға тиклем иҫемә лә кермәгән ҙур яҡты мәктәп төҙөлдө. Мине уҡытыусы итеп күсерҙеләр һәм мин IV класта уҡыта башланым. Билдәле, миңә, йәш уҡытыусыға, башта еңел булманы. Миңә төндәр буйы методик китаптар өҫтөндә ултырырға тура килде. Мәктәп директоры һәм уҡыу бүлеге мөдире миңә ярҙам күрһәттеләр.

Урындағы Советтарға һайлауҙар ваҡытында мине ҡала Советына депутат итеп һайланылар. Миндә тағы ла ныҡыраҡ эшләү, халыҡҡа бөтә көсөм менән хеҙмәт итеү теләге артты.

Мин Тыуған илебеҙҙең үҫеүе һәм экономик яҡтан ныҡыуы, халҡыбыҙ бәхетенең артабанғы күтәрелеше өсөн, депутат булараҡ, бөтә көсөмдө һалып эшләйем һәм киләсәктә лә шулай хеҙмәт итәсәкмен.

Шулай итеп, мин ябай ауыл ҡыҙы, ҡала менән бергә үҫтем. Бының өсөн мин иң тәүҙә большевиктар партияһына, Совет хөкүмәтенә һәм һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға бурыслымын.

Ә. Бимитова,

уҡытыусы, Октябрьский ҡала Советы депутаты.



Һүрәттә: Октябрьский ҡалаһындағы урта мәктәп.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ҡала хужалығының үҫешендә ҡала Советының ойоштороу-массовый эше

Республиканың ғорурлығы булған Октябрьский ҡалаһының төҙөлөүенә ошо йылдың 5 апрелендә биш йыл тула. Был, үҫеп барыусы йәш ҡаланың ғына түгел, бәлки бөтә Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең дә тормошонда ҙур ваҡиға булып тора. Ул, беҙҙең большевиктар партияһының, бөйөк Сталиндең инициативаһы һәм хәстәрлеге менән илебеҙҙең Көнсығышында барлыҡҡа килтерелгән нефть базаһы системаһында күренекле урынды тота.

Октябрьский нефтселәре был дәнйыҡлы датаны социалистик төҙөлөштөң бөтә тармаҡтарында ла ҙур уңыштар менән билдәләйҙәр. Барыһан да элек, улар алдынғы бай техниканы киң ҡулланып, илебеҙгә нефть сығарыуҙы әленән-әле арттыра баралар. Тик 1947 йыл менән сағыштырғанда ғына ла, нефть сығарыу 1950 йылда ике тапҡырға, бораулау эштәренең күләме өс ярым һәм төҙөлөш күләме ике ярым тапҡырға үҫте.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының һәм Совет хөкүмәтенең күрһәткән ҙур ярҙамы арҡаһында йәш нефть ҡалаһы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Был йылдар эсендә күп промышленность предприятиелары, күп ҡатлы яҡшы биналар төҙөлдө. Ҙур-ҙур торлаҡ йорттары, балалар учреждениелары, магазиндар, кинотеатр, амбулаториялар, больница һәм башҡа культура, дауалау учреждениелары барлыҡҡа килде. Тик һуңғы өс йылда ғына 100 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөлөп, эксплуатацияға бирелде.

Ҡаланың үҫеүе менән бер рәттән, уның халҡы ла йылдам арта барҙы. Һәм шуның менән бергә уҡыусы балаларҙың һаны ла бик тиҙ үҫә. Был, ҡаланың партия-совет ойошмаларынан, беренсе нәүбәттә, ҡала Советынан мәктәп селтәрен киңәйтеүгә айырыуса иғтибар биреүҙе талап итте. Был өлкәлә ҡала Советы байтаҡ сараларҙы тормошҡа ашырҙы. Һөҙөмтәлә унлаған яңы мәктәп бинаһы, шул иҫәптән балалар музыкаль мәктәбе, пионерҙар йорто төҙөлдө. Башҡа тармаҡтарҙағы кеүек үк, мәктәптәр төҙөлөшөндә депутаттар һәм общественность актив ҡатнашлыҡ итте һәм итә.

Дауалау-профилактика учреждениелары селтәре лә ныҡ киңәйтелде. Был осор эсендә 16 медицина учреждениелары бинаһы һалынды. Поликлиника, больницалар, тубдиспансер, туберкулез ауырыуҙарын дауалау санаторийе, яслелар, аптекалар асылды. Нарыш, Московка, Тәрмән посёлкаларында һауыҡ һаҡлау пункттары ойошторолдо.

Үткән йылдың декабрь айында урындағы Советтарға һайлауҙар көнөнә 80 өсөгә иҫәпләнгән, яҡшы йыһазландырылған бала тыуҙырыу йорто бинаһы төҙөлөп бөтөп, эксплуатацияға тапшырылғайны. 76 яҡты ҙур бүлмәнән торған был йорттоң бөтә палаталары ла радиолаштырылған һәм телефонлаштырылған.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Октябрьский ҡала Советы депутаттарҙың, общественный ойошмаларҙың һәм хеҙмәтсәндәрҙең актив ҡатнашлығында был йылдар эсендә ҡаланы төҙөкләндереү һәм электрлаштереү буйынса ла күп кенә эштәр башҡарҙы. Ҡала паркы, баҡсалары, стадион, урамдар төҙөкләндерелде. 150 мең төптән артыҡ ағастар һәм ҡыуаҡлыҡтар ултыртылды. Ҙур күләмдә водопровод һәм газопровод үткәрелде. Тиҫтәләрсә километр оҙонлоғонда электр линиялары үткәрелде. Нарыш, Московка посёлкалары электрлаштерелде. Яҡын көндәрҙә насос станцияһы хәрәкәткә инәсәк һәм быйыл хеҙмәтсәндәрҙе һыу менән тәьмин итеү мәсьәләһе нигеҙҙә хәл ителәсәк.

Бөтә был саралар өлкә һәм ҡала партия ойошмаларының оператив етәкселегендә һәм булышлығында ҡала Советының ныҡышмалы эшмәкәрлеге менән тормошҡа ашырылалар.

Ҡала Советы исполкомы торлаҡ һәм культура-тормош объекттәре төҙөлөшө, төҙөкләндереү мәсьәләләрен һәр ваҡытта үҙенең иғтибар үҙәгендә тота. Улар исполкомдың ултырыштарында, Советтың сессияларында тикшереләләр, депутаттарҙың көндәлек эшендә мөһим мәсьәлә булып торалар. Ниндәй генә төҙөлөш объектын алма — торлаҡ төҙөлөшөмө, юлдарҙы һәм тротуарҙарҙы төҙөкләндереү, водопровод, газопровод үткәреүме — уларҙың һәр береһендә лә ҡала Советының, исполкомдың, депутаттың ҡатнашлығын күрәбеҙ.

Алға ҡуйылған хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө бурыстарын уңышлы хәл итеү — ул Советтарҙың ойоштороу-массовый эшенең кимәленә, массалар менән киң бәйләнеш тотоуға бәйләнгән. Бына шуға күрә лә беҙ һайлаусыларҙың наказдарынан сығып, ойоштороу-массовый эште күтәреү сараларын күрәбеҙ. Депутаттарҙың, даими комиссияларҙың эшмәкәрлеген активлаштерәбеҙ. Ошо маҡсаттарҙа депутаттарҙың сессияларҙа сығыштарын, ә һайлаусылар алдында отчет биреп барыуҙарын ойоштораБыҙ. Ҡала Советының күпселек депутаттары үҙ һайлаусылары алдында отчет бирҙеләр. Ә Фролов, Мохалин, Черненков, Инсафетдинов, Розенбаум, Шипов, Королев кеүек иптәштәр үҙ һайлаусылары алдында эшләгән эштәре тураһында икешәр-өсәр тапҡыр сығыш яһанылар.

Ҡала Советы депутаттары араһында беҙ үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәре менән танылған бик күп производство алдынғыларын, новаторҙарҙы, уҡытыусыларҙы, врачтарҙы, инженерҙарҙы, коммуналь предприятиелар работниктарын күрәбеҙ. Социалистик Хеҙмәт Геройы, Сталин премияһы лауреаты И. Куприянов, тиҙләтелгән метод менән бораулау мастерҙары Ҡ. Беляндинов, И. Усов, йөҙ мең километр үтеүсе шофер К. Ихтисамов, танылған штукатурсы Е. Модина, М. Фазлыева, П. Козлов, Советтар Союзы Геройы Ш. Ғәтиәтуллин, промыселдың алдынғы стахановкаһы Т. Карпухина, маҡтаулы ташсы А. Аҡшулов, тракторист Х. Сиразетдинов, Сталин премияһы лауреаттары — «Туймазынефть» тресының баш геологы Т. Золоев, трест управляющийы П. Галонский, М. Потюкаев; инженерҙар А. Жданов, П. Вовченко, А. Хәкимов, предприятие етәкселәре Ф. Дилмөхәмәтов, С. Кашапов һәм башҡа бик күп иптәштәр — халҡтың достойн вәкилдәре булып торалар.

Ҡала Советы үҙенең бөтә эшен ошо депутаттарға таянып, уларҙың һәм даими комиссияларҙың актив ҡатнашлығында үткәрә. Төҙөлгән даими комиссиялар, — улар составына 70-кә яҡын депутат инә, — сессия тарафынан раҫланған план нигеҙендә ойоштороу-массовый эштәре алып баралар. Эш пландары нигеҙе итеп һайлауҙар осоронда хеҙмәтсәндәр тарафынан индерелгән тәҡдимдәр һәм тәнҡит замечаниелары алынды. Улар ҡала Советы исполкомы, уның бүлектәре тарафынан даими комиссия члендарының ҡатнашлығында ентекле өйрәнелде.

Ҡала мәктәптәренең, дауалау учреждениеларының, коммуналь хужалыҡ предприятиеларының, урындағы промышленностең, сауҙа ойошмаларының, суд һәм прокуратура органдарының эшен яҡшыртыуға йүнәлдерелгән был тәҡдимдәр биш йөҙҙән артып китәләр. Һайлаусыларҙың биргән наказдары тормошҡа ашырыла баралар. Уларҙы үтәү буйынса күрелгән саралар депутаттар, ҡала матбуғаты, радиовещание аша һайлаусыларға еткерелеп торола.

Урындағы Советтарҙың исполком бүлектәре — Совет государствоһы аппараты системаһының бик мөһим звеноһы булып тора. Ҡаланың йәки районның күп хужалыҡ һәм культура тармаҡтарының эшмәкәрлеге һәм үҫеше өсөн ошо бүлектәр яуаплылыҡ алып баралар. Шуға күрә беҙ исполком бүлектәренең эшен дөрөҫ ҡуйыу, уларҙың эшмәкәрлеген күтәреүгә айырыуса иғтибар бирәбеҙ.

Депутаттарҙың, даими комиссия члендарының актив булышлығында ҡаланың урындағы промышленносе эшен һуңғы ваҡытта һиҙелерлек яҡшыртыуға өлгәштек.

Ағымдағы йылда Октябрьскийҙе төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр башҡарыу күҙҙә тотола. Был ҡаланың партия, совет ойошмалары алдына был эшкә хеҙмәтсәндәрҙе киң мобилизовать итеүҙе талап итә. Беҙ ошо маҡсат менән урам комитеттарының һәм йорт комитеттарының халыҡ араһында отчет-һайлау йыйылыштарын үткәреүгә башланыҡ. Бында беҙҙең депутаттарыбыҙ актив ҡатнашлыҡ итәләр.

Ҡала Советының төҙөлгән даими комиссиялары эсенән революцион законлыҡ даими комиссияһы айырыуса актив эшләп килә. Депутат А. Степанов етәкселегендәге был комиссия хеҙмәтсәндәр араһында ҙур ойоштороу-массовый эштәре алып бара. Комиссия члендары депутат Миңлеәхмәтов, Антонов, Балыкова, Новикова ҡаланың предприятиеларында «СССР граждандарының төп хоҡуҡтары һәм бурыстары», «Тыуған илебеҙҙе яҡлаусыларҙың семьяларына һәм Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарына налогтан льготалар», «Совет государствоһында суҙдың роле» кеүек темаларға докладтар, лекциялар уҡынылар. Депутат Мәсәрүк, Демина, Новикова иптәштәрҙең инициативаһында февраль, март айҙарында предприятие һәм учреждениела хеҙмәтсәндәрҙең жалоба, ғаризаларын ҡарап тороуҙы, йомош менән килеүселәрҙе ваҡытында ҡабул итеү мәсьәләһе тикшерелде. Тикшереү һөҙөмтәһе төҙөлөш ойошмаларында волокитасылыҡ һәм бюрократизмға юл ҡуйылыу фактарын асты. Исполком комиссияның материалдары буйынса мәсьәләне махсус ултырышта ҡарап, гәйеплеләргә ҡаты сара күрҙе һәм кәмселектәрҙе бөтөрөү сараларын билдәләнелде.

Советтар — хеҙмәтсәндәрҙе тәрбиәләү, уларҙың ижади активлеген үҫтереү ойошмалары булып торалар. Был, ғәйәт миллионлаған массаның государство менән идара итеүҙә, коммунизм төҙөлөшөндә ҡатнашыуын тәьмин итә. Бына шуға күрә беҙ урындағы Советтарҙың ойоштороу-массовый эшен артабан яҡшыртыу, даими комиссияларҙың эшенә күберәк булышлыҡ итергә, хеҙмәтсәндәр менән бәйләнеште артабан ныҡытыуға өлгәшергә бурыслыбыҙ.

Р. Закиров,

Октябрьский ҡала Советы исполкомы председателе.

Ул үҫә һәм төҙөкләндерелә



Һүрәттә: Октябрьский ҡалаһының дөйөм күренеше. Һулда Совет урамы, уңда Девон урамы.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

Беҙ төҙөгән ҡала

Мин Туймазыла күптән йәшәйем. Тәркмән ауылында тыуып, унда үҫтем. Октябрь революцияһына тиклем оҙаҡ йылдар буйы кулактарҙа эшләнем. Тик Совет власе генә беҙҙе ҡоллоҡтан ҡотҡарҙы. Ул беҙгә бәхетле тормош бирҙе. Коллективизациянан һуң Тәркмән ауылы крәҫтиәндәре яңыса йәшәй башланылар. Туймазыла нефть сыға башлағас, беҙҙең тормошобоҙ бөтөнләйгә яңы төҫ алды. Тәркмән ауылы нефть сығарыуҙың һәм бораулауҙың үҙәге булып әүерелде. Йөҙләгән кешеләр нефть промыслаларына һәм башҡа предприятиеларға эшкә инделәр.

Мин үҙем, элекке батраҡ, ә һуңынан комбайнер, нефть сығарыу мастеры булдым. Беҙҙең балаларыбыҙ ҙа нефтсе булыу тураһында уйлайҙар.

Тәркмән ауылы хәҙер йәш нефть ҡалаһы — Октябрьскийҙың посёлкаһы, ә ҡала үҙе — беҙҙең ғорурлығыбыҙ. Ул шундай тиҙ темп менән үҫте: ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә республикабыҙҙың культуралы һәм иң эре промышленность үҙәгенә әйләнде. Беҙ ҡаланың тәүге кешеләре генә түгел, ә уны үҙ ҡулыбыҙ менән төҙөүселәр ҙә булып торабыҙ. Нефтселәр һәм төҙөүселәр промышленность предприятиеларын һәм ҡаланы үҫтереү өсөн үҙҙәренең көстәрен йәлләмәйҙәр.

Тыуған ҡалабыҙҙың 5 йыллыҡ юбилей көнөндә, беҙ, нефтселәр:

— Бик күп эшләнек, күп төҙөнөк. Ләкин беҙгә өлгәшелгәндәр менән генә мауығып ҡалырға нигеҙлектәр юҡ. Ҡала төҙөлә, үҫә һәм ул киләсәктә лә шулай дауам итергә тейеш. Октябрьский ҡалаһын төҙөүҙе беҙ киләсәктә тағы ла тиҙерәк темп менән алып барыу тураһында, һис шикһеҙ, ышандырабыҙ. Һәм шулай булыр ҙа, — тибеҙ.

Тағы ла биш йыл үтер. Нефтселәр ҡалаһы бөгөнгө көндән дә матурыраҡ булыр, уның хеҙмәтсәндәре илебеҙҙә коммунистик общество төҙөү эшенә тағы ла күберәк вклад индерерҙәр.

М. Хәсәнов,
«Туймазынефть» тресының икенсе номерлы промыслаһы мастеры.

СТАЛИНСЕ ХӘСТӘРЛЕК

Мин 1946 йылда бораулау контораһына эшкә индем. Ул саҡта Октябрьскийҙа нефтселәр клубы, 10-ға яҡын 8-әр квартиралы йорт һәм ябай типта төҙөлгән бер нисә торлаҡ бинаһы ғына бар ине. 1946 йылда унда бик ҙур төҙөлөш эштәре йәйелдерелде. Ул айлап ҡына түгел, ә көнләп, сәғәтләп үҫә башланы. «Икенсе Баку» үҙәге — Октябрьский ҡалаһы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә минең күҙ алдымда танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Элекке, иҫке типтағы ваҡ йорттар урынына, эре матур йорттар, промышленность предприятиелары, культура-ағартыу учреждениелары үҫеп сыҡтылар. Беҙ, Октябрьский нефтселәре, хәҙер яҡты, иркен, матур һәм культуралы төҙөлгән йорттарҙа йәшәйбеҙ. Ҡала хеҙмәтсәндәренең культура-тормош кимәле лә әленән-әле үҫә, мәктәптәр селтәре йылдан-йыл киңәйә бара. Хәҙер ҡалала 14 мәктәп, учебный комбинат, эшсе-йәштәр өсөн кискә мәктәп бар. Ҡалала нефтселәр кинотеатры, дүрт клуб һәм пионерҙар йорто эшләй.

Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте һәм иптәш Сталин үҙе Октябрьский хеҙмәтсәндәренең культура-тормош һәм политик-тәрбиә кимәлен артабан күтәреүҙә көндәлек хәстәрлек күрә. Нефтселәрҙең һаулыҡтарын һаҡлауҙа был айырыуса асыҡ күренә. 350 койкалы ҡала больницаһы, 50 койкалы бала тыуҙырыу йорто, амбулатория, аптекалар — быларҙың бөтәһе лә нефтселәр тураһында сталинсе хәстәрлектең асыҡ миҫалдары.

Ҡалала промышленность предприятиелары йылдан-йыл үҫә бара. Улар әргәһендә культура һәм һаулыҡ һаҡлау учреждениелары селтәрҙәре лә киңәйтелә. Нефтселәргә эш урындарында уҡ медицина ярҙамы алыу мөмкинлеге булдырылды. Бораулау бригадалары махсус автомашиналарға урынлаштырылған медицина пункттары менән хеҙмәтләндереләләр.

Партияның ҙур хәстәрлегенә яуап итеп, нефтселәр производство программаһын йылдан-йыл уңышлы үтәйҙәр, яңы уңыштарға өлгәшәләр. Ҡаланың 5 йыллыҡ юбилейен «Туймазыбурнефть» тресы коллективы производство программаһын срогынан алда үтәп ҡаршыланы. Икенсе номерлы бораулау контораһы коллективы бораулауҙың квартал планын срогынан өс көн алда тамамланы. Бораулау мастерҙәре Гуров, Рәхимов, Горшенин, Волков һәм Аллаяров иптәштәр етәкселек иткән бригада члендәре, май алды ярышына ҡушылып, март айы планын 112 — 155 процентҡа үтәнеләр. Беренсе номерлы бораулау конторaһы коллективының эшендә лә уңыштар ҙур. Ул да март айында планды срогынан алда тамамлауға өлгәште.

Хәҙер беҙ, нефтселәр, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү өсөн май алды социалистик ярышын киң йәйелдерҙек. Ул беҙгә тағы ла ҙур уңыштарға өлгәшеү мөмкинлеген бирәсәк.

Н. Нуркаев,
«Туймазыбурнефть» тресы икенсе номерлы бораулау конторaһының план бүлеге начальнигы.

> «Государство планын срогынан алда үтәү өсөн бөтә халыҡ социалистик ярышында ҡатнашыу беҙҙең өсөн, Башҡортостан нефтселәре өсөн, большевистик традиция булып әүерелде. Шуға күрә үҙған йылдар өлгәһендә, беҙ 1951 йылдың планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш ойоштороға ҡарар иттек һәм Азербайжандың һәм Куйбышев өлкәһенең нефть промышленносе работниктарын үҙған йылда башланған социалистик ярышты дауам итергә саҡырабыҙ».
>
> (Башҡортостан нефтселәренең иптәш И. В. Сталинға яҙған хаттарынан).

ҺАНДАР ҺӨЙЛӘЙ

Уҡыу-уҡытыу селтәре йылдан-йыл киңәйә. Хәҙер ҡалала 14 мәктәп бар. Ундағы уҡыусылар һаны биш йылда 1683 кешенән 7085 кешегә тиклем етте. Хәҙер мәктәптәрҙә 285 уҡытыусы бар.

* * *

1946 йылда ҡаланың библиотекаһында китап фонды 1450 дана булһа, хәҙер ул 120 меңгә етте. Бынан биш йыл элек 4 библиотека бар ине. Хәҙер улар бөтәһе 32 иҫәпләнә.

* * *

Биш йыл эсендә больницалар һәм бала тыуҙырыу йорттары өс тапҡырға артты. Ундағы койкалар һаны 365-кә етә. 1946 йылда улар 95 кенә ине.

* * *

Ҡалала бөтәһе 7 киноустановка эшләй, 7 балалар баҡсаһы һәм ясләләр, 8 һаулыҡ һаҡлау пункты бар.



Һүрәттә: Октябрьский ҡалаһының нефтселәр клубы.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

БӨЙӨК ЮЛБАШСЫҒА РӘХМӘТ!

Бынан биш йыл элек бәләкәй поселка ҡалаға әйләнде. Шул ваҡыттан алып Октябрьскийҙа нефть предприятиелары лә үҫә башланы. [illegible] квартиралы торлаҡ йорттарында хеҙмәтсәндәр [illegible] асфальтланған яңы урамдар, баҡсалар, скверҙар, яңы больницалар, мәктәп һәм клубтар, балалар баҡсалары һәм ясләләр — бөтәһе лә нефтселәргә һәм бораулаусыларға хеҙмәт итәләр.

[illegible] Тыуған илебеҙҙән башҡа бер генә илдә лә ундай төҙөлөш, бораулаусылар тураһында атайҙарса хәстәрлек юҡ һәм уның булыуы ла мөмкин түгел. [illegible]

[illegible] Илебеҙгә, халҡыбыҙға тоғро хеҙмәт итәм.

Бындай сталинсе хәстәрлеккә яуап итеп, беҙ, бораулаусылар, хеҙмәт етештереүсәнлеген көндән-көн арттыра барабыҙ. [illegible]

[illegible] бөйөк Сталинға рәхмәт!

И. Куприянов,
1-се класлы бораулау мастеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Сталин премияһы лауреаты.

Әлек ҡырылай, буш ятҡан яланда нефть ҡалаһы — Октябрьский үҫеп сыҡты.
Һүрәттә: ҡаланың үҙәк урамдарының береһе — Совет урамы.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

Йәш ҡаланың даны

Матур Ыҡ йылғаһының бер яҡ яры буйлап гел тау теҙмәләре һуҙыла. Ҡарт Уралдың алыҫтағы туғандары булған был тауҙарҙың һәр береһенең исеме бар һәм шуға бәйле рәүештә тыуған легендалар йәшәй. Ҡасандыр, кемдәрҙер ундағы тауҙарҙың береһен «Нарыштау» тип атаған. Ҡасандыр, кемдәрҙер шул Нарыштау буйына килеп ултырғандар һәм уны Нарыш ауылы тип исемләгәндәр. Ундағы ҡартларҙың әйтеүҙәренә ҡарағанда, был ауыл инде йөҙ илле йылдан артыҡ йәшәгән. Һәм бына, һуңғы йыл эсендә уның икенсе ғүмере, икенсе йәшлеге башланған.

Бынан ун — ун биш йыл элек совет геологтары Нарыштау итәгендә ҡара алтын ятышы таптылар. Бына шул ваҡиға Нарыш буйының ләмыштын үҙгәртеп ебәреүгә, быуаттар буйы тыныс ятҡан тау ҡуйына яңы шаулы тормош индереүгә сәбәпсе булды. Тәүге фонтан атылғандың икенсе көнөндә үк тағы разведчиктар, геологтар, инженерҙар, бурильщиктар килделәр һәм ғорур тауҙың таш күкрәген һәм туғайлы итәктәрен әле бер яҡтан, әле икенсе яҡтан тишкеләй башланылар.

Ана шулай яңы бай нефть районы барлыҡҡа килде. Ҡайнар хеҙмәт менән тулған яңы промышленность районы тыуҙы.

Нарыш ауылында быға тиклем күренмәгән машиналар килделәр. Ауылдың бер башына таштан сехаңик мастерской, ҙур гараж, бәләкәс кенә контора, һуңғараҡ силовой станция һалып ебәрҙеләр. Машиналар, тракторҙар ағылды. Күп һанда кешеләр килә башланы. Нарышта уларға урын етмәне. Шунан бер аҙ ситтәрәк торлаҡ йорттар ҡалҡып сыға башланылар.

Ундағы кешеләр бөгөнгөләй хәтерләйҙәр — тауҙа Нарыштан Мулла ауылына сыға торған юл буйында ике ҙур бина ҡалҡып сыҡты. Унда яңы ойошторолған трест урынлаштырылғанға күрәлер инде, был урам халыҡ телендә оҙаҡ ваҡыт «контур урамы» тип йөрөтөлдө. Шунан алыҫ түгел ерҙә бер-бер артлы ҙур таш йорт төҙөлдө. Был төбәкте тауҙа «таш төбәк» тип йөрөттөләр. Ана шулай бер-бер артлы «ағас урам», «яр буйы урамы», «Мулла яғы» һәм башҡа шундай яңы райондарҙың рәсми булмаған исемдәре барлыҡҡа килделәр.

Был урындарҙа хәҙер тығыҙ саф булып матур биналар теҙелеп киткәләр һәм официаль исемдәре булған яңы урамдар барлыҡҡа килде. Ана шулай итеп, яңы поселкала Сталин урамы, Салауат урамы, Девон урамы, Комсомол урамы, Совет урамы, Октябрь урамы һәм башҡа күп яңы урамдар донъяға тыуҙы. Интенсив рәүештә көндән-көн үҫә барған был поселкаға РСФСР Верховный Советының 1946 йыл 4 апрель Указы менән ҡала исеме бирелде. Нефтселәрҙең һорауы буйынса уны Октябрьский тип атанылар.

Төҙөлөш һаман үҫте. Тегендә лә, бында ла яңы биналар ҡалҡып сыҡтылар. Тегендә лә, бында ла ҡыҙыл корпустар үҫә барҙылар. Тегендә лә, бында ла яңы йорттар өсөн котловандар ҡаҙылды, фундамент һалынды. Бетон әҙһаусы машиналар тырылдауы донъяны ҡаплап алды. Машиналар, тракторҙар, дизелдәр гөрөлдәүе бөтәһе бергә ҡушылып яңы ҡала өҫтөнә йәйелде. Йәш ҡала хеҙмәт эсенә күмелде.

Октябрьский ҡалаһы киң ҡоласын йәйеп үҫә барҙы. Уның менән бергә кешеләре лә, үҙендә йәшәүсе граждандар ҙа үҫтеләр, көн һайын, сәғәт һайын яңы уңыштарға ирешеп, йәш ҡаланы, республиканы, бөтә совет илен алға илтеү өсөн ҡайнар йөрәк менән хеҙмәт иттеләр, йән аямай көрәштеләр. Һәр яңы йыл Нарыш тау итәгенә өлөү килтерҙе, һәр яңы йылда Октябрьский ҡалаһының граждандары үҙҙәренең хеҙмәт һәм көрәш мөмкинлектәрен арттыра килделәр, йылдан йыл илгә нефтте күберәк сығара башланылар. Яңы нефть районын яңы камиллашҡан техника менән байыҡтырҙылар һәм шулай итеп үҙҙәренә ярҙамға техниканы саҡырҙылар. Улар, октябрьселәр көн һайын, сәғәт һайын ҡайнар хеҙмәт алып баралар. Октябрьскийға килеп инеү менән үк был хеҙмәттең емештәрен күрәһең, кеше аҡылының һәм кеше ҡулының көсөн тояһың. Октябрьский — ул техниканы дөрөҫ файҙалана белеүсе ябай һәм оҫта ҡуллы эшселәр, нефтселәр, төҙөүселәр ҡалаһы.

Ғәҙәттә, ҡалаларҙың тарихе була. Был ҡаланың яҙылған тарихе юҡ әле. Ләкин инде уның алыҫтарға киткән даны бар. Йәш ҡаланың граждандары тарихте инде үҙҙәре яҙалар. Сөнки бөтә нәмә уларҙың күҙ алдында. Бөтә яңылыҡты улар үҙҙәре тыуҙыралар. Ҡаланың һәр бер ташы улар өсөн таныш, һәр бер яңы йорт, яңы цех, яңы урам улар күҙ алдында тыуған. Тарих өсөн әллә ниндәй төмдәр аҡтараһы юҡ. Берәү үҙенең ситтән килгән танышына йәки ҡунағына теге йәки был урамдың ҡасан төҙөлөүен һөйләргә теләй икән, ҡулы менән күрһәтә лә һанап сыға:

— Бына был йортто 1949 йылдың март айында һала башланылар, майҙа төҙөп бөттөләр. Ә быныһы апрелдә башланды... Ә быныһы августа тамамланды...

— Бына был урам әле үткән йыл ғына юҡ ине. Тауҙа бынау йортто төҙөнөләр. Ҡыш көнө бөттө ул. Шунан ана теге башта берәү ҡалҡып сыҡты... шунан быныһы... Күҙ асып күҙ йомғансы урамға әйләнде лә китте, әй...

— Бына был төбәктә бынан ике йыл элек кенә картуф ултырта инек әле...

— Уға ҡалһа, бынан биш йыл элек бында бөтөнләй шыр ялан ине. Ел уйнай... туҙан... башҡа бер нәмә лә юҡ. Ә хәҙер! О-о-о!

Бына ул ҡала хәҙер күҙ алдында йәйелеп ята. Бына ул совет ерендә, сталинсе хәстәрлек менән барлыҡҡа килгән, девон нефте даны менән күтәрелгән, совет илендәге иң йәш ҡалаларҙың береһе Октябрьский, алыҫтарға ҡоласын йәйеп баҫып тора. Хәҙер инде уның бер осо Мулла ауылына тиклем барып тоташҡан һәм икенсе осо Зайыт ауылына барып еткән. Тәркмән һәм Нарыш ауылдарын ул хәҙер үтеп киткән, үҙ эсенә алған. Хәҙер инде Октябрьский ҡалаһы унар километрға һуҙылған ерҙе эсенә алған.

Һәр көн иртә менән яңы ҡала йөҙләгән автомашиналарҙа үҙенең граждандарын вахтаға оҙата. Бораулаусылар әллә ҡайҙа, алыҫтарға китеп яңы скважиналар бораулайҙар. Промыслаларға операторҙар, мастерҙар, техниктар, ремонтсылар ағылалар. Цехтарға, мастерскойҙарға токарҙар, слесарҙар, шлифовщиктар килә. Төҙөлөш объекттарына ташсылар, бетонсылар, плотниктар баралар. Яңы мәктәптәрҙең яҡты класс бүлмәләре, әркелешеп һәм шаулашып килә торған балалар менән тулалар. Ҡала учреждениеларының эшенә асыла. Почта, телеграф, банк, һаҡлыҡ кассалары, гостиница, магазин, ашханалар үҙҙәренә килеүсе граждандарҙы ҡабул итә башлайҙар. Йәш ҡаланың ғәҙәттәге шаулы көнө ана шулай башланып китә. Меңләгән хеҙмәтсәндәр һәр ҡайһыһы үҙ постында намыҫлы хеҙмәт менән ҡаланың данын, байлығын арттыралар. Йәш ҡаланың һәр бер көнө дан килтерә!

Бына ер аҫтынан фонтан булып йәш механизмдәр ләмышында һурып сығарылған йөҙәрләгән тонна «ҡара алтын» тейешле торбалар аша резервуарҙарға, әстәпадаларға, нефтепровод юлдарына китә. Йөҙләгән стахановсылар һәр көн һайын нефть сығарыу планын арттырып үтәйҙәр. Киң баҫыуҙарҙа, туғайҙарҙа, тау ҡултыҡтарында яңы скважиналар бораулаусы стахановсы бурильщиктар һәр көн һайын утыҙар-илләшәр метр ер тишеп үтәләр һәм нефть ҡатламына юл асалар. Илгә нефтте күберәк биреү теләге менән тоҡанған был стахановсылар көндән-көн яңы уңыштарға өлгәшәләр, намыҫлы хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр.

Ҡаланың алдынғы төҙөүселәре иртәнән алып кискә тиклем яңы биналарҙы уратып алған баҫҡыстар өҫтөндә булалар. Ҡалала инде һәр кем белә: бөгөн Сталин урамындағы яңы йорттоң һуңғы ҡаты һалынасаҡ. Комсомол урамындағы йорттоң түбәһе ябыласаҡ. Девон урамында яңы бер йорттоң нигеҙен һала башлаясаҡтар. Салауат урамындағы ҙур бинаны штукатурлау эше тамамланасаҡ һәм кемдәрҙер, инде яңы, яҡты, йылы квартираларға күсеп, яңы тормош башлап ебәрәсәктәр.

Был ҡалала минут һайын тормош ҡайнай. Был ҡалала тормош көндән көнө түгел, сәғәт һайын, минут һайын алға бара. Шуның өсөн, бында, Октябрьскийҙа, сәғәттең һәм хатта минуттың да ҡәҙерен беләләр.

Ҡаланың йәрәк тибеше тәүлек буйына туҡталмай. Көндеҙ эшләгән хеҙмәт кешеләрен, кискә иңгәс, икенселәр, шундай уҡ ныҡышмалылыҡ һәм ойошҡанлыҡ менән эшләүселәр дауам итерәләр. Вахталар алмашыналар, машиналар йөрөшө тағы йышая. Машиналар гөрөлдәүе, гудок тауыштары тағы көсәйеп китә. Ҡала өҫтөндә емелдәшеп электр лампочкалары балҡый башлайҙар.

Төнгө ҡала тағы ла әҙәмләрәк күренә. Уттар хингеҙе ҡаланы балҡып яҡтырта: Был яҡтылыҡта уның тағы ла матурыраҡ һәм данлыраҡ киләсәге сағыла. Ә уның киләсәге — совет тупрағында тыуған башҡа меңләгән ҡалаларҙың киләсәге кеүек үк яҡты, бәхетле, данлы.

* * *

Таҫма булып һуҙылған асфальт юлдарҙан бер туҡтауһыҙ машиналар үтә. Улар әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа ағылалар. Асфальт юл бер яҡлап Туймазыға алып китә. Икенсеһе уны Урусу станцияһына алып бара. Ә өсөнсө юналешкә һуҙылғаны, Ыҡ йылғаһы аша сыға ла күрше республика, Татарстан еренә алып китә. Бирерәк Туймазы юлында Иҫке Туймазы ауылы тирәһендә асфальт юл тағы икегә айырыла. Быныһы ла уның яңы промыслаларға, яңы эш объекттарына алып бара. Ошо юлдар инде йәш ҡаланы ҙур донъя менән тоташтырып торалар.

Асфальт юл, бер-береһенә бик оҡшашлы, тәпәш кенә тауҙар теҙмәһе аша, матур туғайҙар, тау ҡултыҡтары аша һуҙыла. Ваҡ ҡына йылғалар тура килгән ерҙә лә хәҙер тимер бетондан нығыҡлы күперҙәр һалынған. Олораҡ кешеләр күперҙең тимерҙәрен ҡулдары менән тотоп һоҡланып бөтә алмай ҡарап торалар.

— Ғүмерлек бит был, ә?

— Мәңгелек!

Мәңгелек тауҙың итәгендә яңы тыуған ҡала янында, ҡайнап торған юл өҫтөндә әйтелгән был һүҙ, нисектер, символ булып яңғырай.

Эйе, был ҡала үҙе лә, уның кешеләре тыуҙырған хеҙмәттең [illegible] оҙаҡ йәшәр. Юҡ, улай ғына әйтеү әҙ, ул бөйөк эпоханың даны, ҡомартҡыһы булып мәңге йәшәр.

Кирәй Мәргән.

Ғ. Ғәлиев

АЛЫҪТА, ТУНДРАЛА

Яңы яҡты ҙур йорт халҡын сыҡты
Тундрала йәшәр ерендә.
Йорт ҡырында мәңге тун булған ер
Саҡсы, гелдәр менән ныҡлы.
Шул яңы йорт тулы яңы бәхет
Шатлыҡлары совет кешеһе,
Һәм тәрәҙә күркәм йортҡа ҡарап
Тойҙо шунда үҙенең ҙур көсөн.
Тун далала бәхет яҙы булып
Тыныс хеҙмәт йәйгән ҡоласын;
Бөгөн ерҙең бөтә аҫмаҡтары
Тегелә генә нама уйлайһын,
Күркәм йорттар ҡорған совет кешеһе
Белә үҙенең ҙур Ватаныш ныҡлап.

Коммунизм таңы тыуаһын,
Бөйөк таңға күркәп нигеҙ өсөн
Ватаныбыҙ сикһеҙ ерәре,
Яҡ килтерен Тундра ҡырҙарына
Ул күсер Ҡрым гөлдәрен.
Йәт, атомсы, ниндәй көс бар ерҙә
Яҙ тылыурға шуның торорға,
Һүнмәҫ һәм, бөйөк яҙ бар ала
Ҙур тарихтың үрге юлына!
Ҙур йорт халҡы ел-дауылы ерҙең
Яҙҙан хакимле булы һыуыш,
Тормош еләп көсөк ел-дауылды
Тыныслыҡ та еҫер һуғышты.

Хәбибулла Ибраһимовтың ижадына арналған әҙәби-музыкаль кисә

2 апрелдә, Өфө рус драма театрында башҡорт искусствоһының тарт мастеры, драматург-композитор Хәбибулла Ибраһимовтың 30 йыллыҡ ижади хеҙмәтенә арналған әҙәби-музыкаль кисә булды.

Әҙәби-музыкаль кисәлә драматург-композитор Хәбибулла Ибраһимовтың ижад юлы тураһында яҙыусы Сәйфи Ҡудаш доклад менән сығыш яһаны.

Башҡортостан совет яҙыусылары союзынан Ә. Харисов, башҡорт государство академия драма театры коллективе исеменән РСФСР халҡ артисы Ә. Зәбаиров, Башҡортостан совет композиторҙары союзынан Х. Әхмәтов, башҡорт опера театры коллективенан З. Илбаева, искусство работниктәренең өлкә союзы комитеты исеменән Н. Хәфизов иптәштәр юбилярҙы котлап сығыш яһанылар һәм алда тағы ла ҙурыраҡ ижади уңыштар телнеләр.

Кисәнең икенсе өлөшөндә драматург-композитор Хәбибулла Ибраһимовтың «Башмағым» музыкаль комедияһынан, «Буҙансай» әҫәрәнән өҙөктәр бирелде һәм композиторҙың йырҙары башҡарылды.

Оҙон ғүмерле «Башмағым» комедияһындағы өҙөктәрҙә Карим бай ролендә 27 йыл буйына уйнаған РСФСР халҡ артисы Ғ. Миңһажев, Сәрби ролендә 27 йыл буйына уйнаған РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Б. Йосопова, Хәйруш ролендә 28 йыл буйына уйнаған РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Ғ. Ҡарамышев, Сәрүәр ролендә артистка Р. Яңбулатова, Ғәлимйән ролендә Х. Ҡудашев иптәштәр ҡатнаштылар.

Вкладчиктәрҙең һаны арта

Илебеҙҙә государство хеҙмәт һаҡлыҡ кассаларының селтәре көндән-көн киңәйә. Тик беҙҙең республикабыҙҙа ғына 520-нән артыҡ һаҡлыҡ кассаһы иҫәпләнеп, уларҙа 144 мең кеше вкладчик булып тора.

Һаҡлыҡ кассаларында вкладчиктәр һаны һәм вкладтар суммаһы йыл һайын арта. 1949 йылға ҡарағанда, вкладчиктәр һаны 1950 йылда 25000 кешенән һәм вкладтар суммаһы 28 миллион һумдан ашыуыраҡҡа үҫте.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм Совет Хөкүмәтенең ҡарары буйынса 1951 йылдың 1 мартынан продукттарҙың һәм тауар хаҡтарының арзанайтылыуы һаҡлыҡ кассаларында вкладтарҙың артыуына ыңғай тәьҫир яһаны. 1951 йылдың ике ай ярым ваҡыты эсендә республикала вкладтар суммаһы 14 миллион һумға, ә вкладчиктәр һаны—7 мең 500 кешегә артты.

Һаҡлыҡ кассалары бер нисә төр вкладтар: вкладчиктең үҙе талап итеүе буйынса түләнә торған (до востребования), сроклы, шартлы, отошло һәм ағымдағы счетҡа булған вкладтар ҡабул итә.

Уларҙың иң күп таралғандарынан береһе булып вкладчиктең үҙе талап итеүе буйынса түләнә торған вклад иҫәпләнә. Бындай вкладтар билдәле бер кеше исеменә йәки вкладчиктең теләге буйынса икенсе бер кеше исеменә лә ҡабул ителә, һәм вкладтар буйынса йылына 3 процент иҫәбенән доход түләнә.

Отошло вкладтар башҡа төр вкладтарҙан шуның менән айырылалар, вкладчиктәр был төр вклад буйынса доходты отоштар формаһында алалар. Отоштар отош тиражында йылына ике тапҡыр уйналалар. Отошло вкладтарҙың күләме һәр бер счет буйынса 10.000 һумдан артырға тейеш түгел, ләкин вкладчиктең отошло вкладтар буйынса бер нисә счет асырға хаҡы бар.

Республикабыҙҙың 5165 вкладчиге үҙҙәренең аҡсаларын была ошо отошло вкладтарҙа һаҡлайҙар.

В. Рахманов.

Әрләтелгән колхозда культура-ағартыу эштәре

Беҙҙең Карл Маркс исемендәге эрләтелгән колхоздың члендәре (Баҡалы районы) мул һәм культуралы тормошта йәшәйҙәр. Хәҙер беҙҙә ике радиоузел һәм бөтә дүрт бригадала ла клуб, уҡыу өйҙәре бар.

Колхоздың үҙәк клубы стандарт типта һалынды. Унда тамашасылар һәм китап уҡыусылар залдары, төрлө түңәрәктәр өсөн эш бүлмәләре йыһазландырылды. Драма түңәрәге өсөн пианино, баян, гармон һәм башҡа һәр төрлө музыка инструменттәре алдыҡ. Художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәге һәр аҙна һайын спектакль һәм концерт номерҙәре менән сығыш яһай. Үҙәк библиотека ла ошо клубта урынлашҡан. Библиотека күп һандағы фәнни-политик, ауыл хужалығы һәм художество әҫәрҙәре менән комплектовать ителде. Унда шулай уҡ 20 дана һәр төрлө газета һәм журналдар алдырыла.

Библиотека эргәһендә ойошторолған агротехник түңәрәккә колхоз члендәре ҙур ҡыҙыҡһыныу менән йөрөйҙәр.

6 кешенән ойошторолған лекторҙар группаһы халыҡ-ара хәл, ауыл хужалығы һәм фәнни темаларҙа систематик беседалар һәм лекциялар ойоштора. Айырым лекцияларҙы радиоузел аша трансляцияларға итеүҙе ҡулланабыҙ.

Беҙҙә өлкә һәм район газеталары алдырмаған бер генә хужалыҡ та юҡ. Үҙәк клубҡа һәм библиотекаға оборудованиелар һәм китаптар алыу өсөн колхоз тағы ла 4 мең һум аҡса бүлде.

С. Кәлимуллин,
Карл Маркс исемендәге колхоздың партбюро секретаре.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 2 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының кәңәшмәһе бөгөн үҙенең эшен дауам иттерҙе. Ултырышта Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

Беренсе булып сығыш яһап Пароди, АҠШ, Великобритания һәм Франция делегациялары исеменән яңы тәҡдим индерҙе.

Был проект түбәндәгеләрҙән тора:

«I. Европала хәҙерге ваҡытта халыҡ-ара хәлдең көсөргәнешле булыуының сәбәптәрен һәм уның һөҙөмтәләрен, шулай уҡ Советтар Союзы менән Ҡушма Штаттар, Ҡушма Королевство һәм Франция араһында ысын-ысындан һәм оҙаҡ дауам иткән яҡшы мөнәсәбәттәр тәьмин итеү өсөн кәрәкле сараларҙы, шул иҫәптән, түбәндәгеләргә ҡайтып ҡалған мәсьәләләрҙе: ҡоралланыуҙың һәм ҡоралы көстәрҙең хәҙер йәшәп килгән кимәленә һәм халыҡ-ара контроль урынлаштырыу һәм шул иҫәптән, СССР, Ҡушма Королевство, Ҡушма Штаттар һәм Франция ҡоралланыуын һәм ҡоралы көстәрен дә индереп, ҡоралланыуҙы һәм ҡоралы көстәрҙе кәметеү өсөн саралар; Германияны демилитаризациялау; быға са йәшәп килгән договор йөкләмәләрен һәм килешеүҙәрен үтәү; һуғыш ҡурҡынысын һәм агрессиянан ҡурҡыуҙы бөтөрөү мәсьәләләрен.

II. Бойондороҡһоҙ һәм демократик Австрияны аяҡҡа баҫтырыу өсөн договорҙы тормошҡа ашырыу.

III. Германияның берҙәмлеген аяҡҡа баҫтырыуға һәм яңашыу договорын әҙерләүгә мөнәсәбәте булған проблемалар».

Пароди үҙенең комментарийҙарында асыҡ рәүештә, йәғни көн тәртибе буйынса өс держава тарафынан тәҡдим ителгән яңы проекттың беренсе пункты СССР делегацияһының министрҙәр Советы ҡарамағына төп проблемалар сифатында Германияны демилитаризациялау тураһындағы һәм дүрт державаның ҡоралы көстәрен кәметеү тураһындағы мәсьәләләр ҡуйылһын, тигән талаптарына тулыһынса яуап бирә, тип һөйләне.

Дэвис тә шул уҡ рухта сығыш яһаны. Джессеп Пароди менән Дэвиска ҡушылды.

СССР вәкиле Громыко көн тәртибенә өс держава делегацияһы тарафынан тапшырылған яңы проекттың асылы буйынса күп кенә иҫкәрмәләр яһаны. Ул был проектта Германияны демилитаризациялау мәсьәләһе беренсе урынды алмай һәм артҡы планға күсерелә, тип күрһәтте. Был, өс держава вәкилдәренең әлеккесә иң мөһим проблеманың әһәмиәтен һанға һуҡмай ҡалдырырға маташҡандарын күрһәтә.

Ҡоралы көстәрҙе кәметеү, халыҡ-ара контроль һәм ҡоралланыуҙың һәм ҡоралы көстәрҙең кимәлен билдәләү мәсьәләһенә килгәндә инде, тине Громыко, өс державаның яңы тәҡдименең беренсе пунктында был мәсьәләләр, әлеккеләге кеүек үк, баш түбән ҡуйылғандар. Дөрөҫ, пункттың редакцияһы үҙгәртелгән, унда беренсе урын, әлеккесә, ҡоралланыуҙың кимәле тураһындағы мәсьәләгә бирелә, һәм бары тик шунан һуң ғына халыҡ-ара контроль тураһында әйтелә. Ләкин бында ла контролдең нимәгә ҡуйылырға тейешлеге, уның ниндәй маҡсат менән индерелергә тейешлеге күрһәтелмәй. Ә шул уҡ ваҡытта Совет делегацияһының 28 марттағы тәҡдимендә, дүрт державаның ҡоралы көстәрен кәметеүгә халыҡ-ара контроль урынлаштырыу тураһындағы мәсьәләне ҡарарға кәрәк, тип асыҡтан-асыҡ әйтелә.

Унан әрі Громыко, ҡоралы көстәрҙе кәметеү тураһындағы мәсьәләнең нисек ҡуйылыуы шунан тора: бында һүҙ дүрт державаның (АҠШ, СССР, Великобритания һәм Францияның) ҡоралы көстәрен кәметеү тураһында барырға тейешме, йә булмаһа өс делегация тәҡдимендә әйтелгәнсә, ғөмүмән ҡоралы көстәрҙе кәметеү тураһында барырға тейешме. Беҙ башта уҡ, тине СССР вәкиле, дүрт державаның ҡоралы көстәрен кәметеү тураһында тәҡдим индерҙек. Сөнки беҙ бында был мәсьәлә тыныслыҡты тәьмин итеү эшендә төп мәсьәлә икәнлеген күҙҙә тоттоҡ. Тап ошо дүрт державаның ҡоралы көстәрен кәметеү тураһындағы мәсьәлә төп мәсьәлә булып тороуына риза булмаҫлыҡ кешене табыуы ҡыйын булыр, тип күрһәттек беҙ. Беҙгә ошо көнгә тиклем, хәҙерге ваҡытта көнбайыш державалар алып барған политика, йәғни Советтар Союзында күп һанлы ҡоралы көстәр булыуы менән килеп тыуған, тип күрһәттеләр. Билдәле булғанынса, бындай һүҙҙәр И. В. Сталиндең «Правда» хәбәрсеһе менән булып үткән билдәле беседаһында, шулай уҡ өс держава хөкүмәтенә Совет хөкүмәте тарафынан ебәрелгән ноталарҙа кире ҡағылды. Ошо йылдың 17 февралендә иғлан ителгән «Правда» хәбәрсеһе менән булған беседаһында И. В. Сталин, Великобританияның премьер-министры Эттлиҙең, йәғни СССР үҙенең ҡоралы көстәрен әленән-әле арттыра бара, тигән белдереүенә ҡағылып, был белдереүҙең ялған булыуын күрһәтте.

«Илдең ҡоралы көстәрен арттырыу һәм ҡоралланыу артынан ҡыуыу хәрби промышленносте йәйелдереүгә, — тине И. В. Сталин, — граждандар промышленносен кәметеүгә, ҙур граждандар ҡоролоштарын туҡтатыуға, налогтарҙы арттырыуға, массовый ҡулланыу тауарҙарының хаҡы күтәрелеүгә килтергәнлеген премьер Эттли үҙ тәжрибәһенән дә, шулай уҡ АҠШ тәжрибәһенән дә белергә тейеш ине. Аңлашыла инде, әгәр Советтар Союзы граждандар промышленносен кәметмәй, ә киреһенсә, киңәйтә икән, яңы грандиоз гидростанциялар һәм һуғарыу системалары төҙөүҙе кәметмәй, ә киреһенсә, йәйелдерә бара икән, хаҡтарҙы арзанайтыу политикаһын туҡтатмай, ә киреһенсә, дауам иттерә икән, — ул инде бының менән бер үк ваҡытта, банкротлыҡ хәлендә ҡалырға тәүәккәлек итмәйенсә, хәрби промышленносте ҡабарта алмай һәм үҙенең ҡоралы көстәрен арттыра алмай.

Һәм, әгәр ҙә премьер Эттли, бөтә был факттарға һәм фәнни фекерҙәргә ҡарамаҫтан, шулай ҙа Советтар Союзына һәм уның тыныслыҡ политикаһына асыҡтан-асыҡ яла яғырға мөмкин, тип иҫәпләй икән, быны инде бары тик шуның менән генә аңлатырға мөмкин, ул Англияла хәҙерге ваҡытта йәшәп килгән лейбористик хөкүмәт тарафынан тормошҡа ашырылған ҡоралланыу артынан ҡыуыуҙы Советтар Союзына яла яғыу менән аҡларға теләй».

Громыко шулай уҡ көн тәртибенә өс держава делегацияһы тарафынан тәҡдим ителгән яңы проект, гәрсә совет делегацияһы был мәсьәлә буйынса үҙенең ҡарашын әйтеп биргән булһа ла, Триесҡа ҡағылған өлөшөндә Италия менән ярашыу договорын үтәргә кәрәклеге тураһындағы мәсьәләне үҙ эсенә алмай, тине.

Өс держава вәкилдәре, тине Громыко, шулай уҡ Атлантик пакт тураһындағы һәм Американың Англияла, Норвегияла, Исландияла һәм Европаның, шулай уҡ Яҡын Көнсығыштың башҡа илдәрендә лә хәрби базалар төҙөү тураһындағы мәсьәләне министрҙәрҙең тикшереүенә ҡуйыу тураһында Совет тәҡдименә яуап бирмәнеләр. Был тәҡдимде индереп, Совет делегацияһы өс держава тәҡдимендә лә, шулай уҡ 28 марттағы Совет тәҡдимендә лә әйтелгән дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәр проблемаһы менән был мәсьәләнең туранан-тура бәйләнешле булыуын күрһәткәйне.

Беҙ көн тәртибенә Атлантик пакт тураһындағы һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне индерергә тәҡдим итәбеҙ. Сөнки хәҙерге ваҡытта йәшәп килгән халыҡ-ара хәлдең көсөргәнешле булыуының сәбәптәренә һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәр хаҡындағы мәсьәләгә уның туранан-тура ҡатнашы бар. Һәм Джессептең, АҠШ-тың, йәғни, башҡа илдәр территорияһында үҙенең хәрби базалары юҡ, тип белдереү яһауы, тине Громыко һүҙен тамамлап, ни дәрәжәлә буш булғанлығы юғарыла әйтелгәндәрҙән асыҡ түгелме һуң. Бары тик әле генә донъяға килгән кешеләрҙең генә былай тип әйтеүҙәре мөмкин.

Өс держава вәкилдәре Громыконың һүҙҙәренә бер төрлө лә яуап ҡайтарманылар.

Алдағы ултырыш 3 апрелдә буласаҡ.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 2 апрель. (ТАСС). Корея Халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 2 апрелдә түбәндәгеләрҙе хәбәр итте:

Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән берлектә бөтә фронттарҙа ла дошманға уның йәнле көсөнә һәм техникаһына байтаҡ юғалтыуҙар килтереп, көслө һуғыштар алып барыуҙа дауам итәләр.

Көнбайыш һәм үҙәк фронттарҙа Халыҡ армияһы частәре һуңғы бер нисә көн эсендә дошмандың 3 меңдән артыҡ һалдатын һәм офицерын юҡ иттеләр, яраланылар һәм пленға алдылар.

Америка һалдаттары Кореяла һуғышырға теләмәйҙәр

НЬЮ-ЙОРК, 2 апрель. (ТАСС). Ассошиэйтед пресс агентствоһы үҙенең хәбәрсеһе Уильям Уоның хәбәрен тапшыра. Ул 6 ай буйына Кореяла йәшәгән, ә хәҙер Гонолулаға килгән. Был мәҡәләлә, Кореялағы америка һалдаттарының мораль хәле әҙләкһеҙ түбәнәйә бара, тип әйтелә. 8-се армияның һалдаттары йыш ҡына: «Беҙ ҡайҙа барабыҙ?» — тигән һорауҙы бирәләр, ләкин яуап ала алмайҙар. «Мин булып үткән бөтә урындарҙа ла, — тип яҙа Уо, — һалдаттар яңылыҡтар менән ҡыҙыҡһыналар һәм был һуғыш ҡасан бөтәр икән? — тип һорайҙар. Кореяға яңы килгән һалдаттар америкалыларҙың Кореяла барған һуғышта ота алмаясаҡтарына бик тиҙ төшөнәләр».

Американ-лисынманы ғәскәрҙәр тылында ... партизандарының хәр...

ПХЕНЬЯН, 31 март. (ТАСС) ... кан-лисынманы ғәскәрҙәр ты... үс алыусылары — Корея ... әленән-әле активераҡ хәрәк... Дошмандың коммуникацияларын... йәнле көсө һәм техникала ҙур... ҙар яһап, партизандар ... ҡурҡыу һалалар. Тауҙарҙа ... зандар дошмандың өҫтөн ... шы ҡыйыу рәүештә һуғыштар... ҙар һәм уға ҙур зыян килтерә...

Ким Ын Бен командовать иткән ... тизандар отряды һуңғы ике ай ... һуғыштарҙа ун тапҡыр булған... зандар 8 мең самаһы дошман ... һәм офицерын юҡ иткәндәр һә... ғандар һәм 380 кешене пленға ...

Пак Чон Гындың партизандары ... дошмандың 6 меңдән артығырағ... тын юҡ иткән, 4 миномет, ... орудиеһе, шулай уҡ башҡа ... еңел һәм ауыр пулемет, винтовкалар, гранаталар һәм башҡа ... ҡулға төшөргәндәр.

Ли Хен Сандың партизандары ... актив хәрәкәт итә, ул быйыл ... дә лисынманы 11-се дивизияһы... полкын тулыһынса һәм 9-сы ... бер батальонын юҡ иткән. Ли ... дың партизандар отряды дошман... тельный отрядтарына ҡаршы ... тапҡыр ҡаты һуғыштарҙа булған... ҙур юғалтыу яһаған.

8 мартта Канвон провинцияһы... Хэнсон өйәҙендә Юн Сап Кирҙең ... зандар отряды лисынманы часть... ҙур һуғыш башлаған, лисынман... һуғыш яланында 317 кешеһен ... күп ҡоралын ҡалдырып, ... леп ҡасҡан.

Ошо көндәрҙә был отряд партиза... Поинвол өйәҙендә лисынманы ... һөжүм иткәндәр. Һуғыш дүрт сәғ... ған. Дошмандың меңдән артығыр... шеһе үлтерелгән. 92 кеше плен... ған. Бик күп ҡорал ҡулға төшө...

Ҡытайҙа берҙәм аҡса системаһын индереү

ПЕКИН, 1 апрель. (ТАСС). ... агентствоһы, 1 апрелдән бөтә ... берҙәм аҡса системаһын индере... һында Ҡытай халыҡ республикаһы ... дарство административ советы ... рына ярашлы рәүештә Төньяҡ-Көн... Ҡытайҙа һәм Эске Монголия автоном... районында урындағы валюталы... знактарын Ҡытай халыҡ банк... халыҡ юаньдарына алмаштырыу ... тип хәбәр итә. Был районда... валюталары булған.

Агентство, берҙәм аҡса системаһы... дереү валютаны артабан стабилл... гә һәм Ҡытайҙың милли экономика... үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк, ти... өҫтәнә ала.

Трумэн менән Ориоль араһында булған һөйләшеүҙәргә ҡарата

ВАШИНГТОН, 30 март. (ТАСС). Америка президентының матбуғат ... буйынса секретаре Шорт Ҡушма ... президенты Трумэн менән Франция ... денте Венсан Ориоль араһында һө... ҙәр булыу тураһында официаль ... хәбәр итте.

Был тураһағы коммюникеһан ... ненсә, Ориоль Трумэнгә «ҡайтадан ... ҡораллаһыу буйынса француз прог... һының нисек тормошҡа ашырылыуы... Индо-Ҡытайҙағы хәлдәр тураһында ... бәр иткән.

Ориоль Франциялағы правител... Америка империалистәре тарафынан ... зәлгән хәрби пландарҙы тормошҡа ... рыуҙа ҡатнашырға әҙер тороуҙары ... һында Америка президентын ... ышандырған.

Трумэн был белдереүгә яуап ... «президент Ориолдең һүҙҙәре ... бирә» тип белдергән.

Вьетнам Халыҡ армияһы... уңыштары

ШАНХАЙ, 31 март. (ТАСС). ... информацион агентствоһы Төньяҡ... ғыш фронттан, биш көн эсендә ... марттан 28 мартҡа тиклем Вьетнам... армияһының ғәскәрҙәре француз... ныҡытылған 15 пунктын юҡ ... йәки ҡулға төшөрҙәләр һәм ... һәм Мао-Хеҙан алып Буанг-Пен ... цияһы башҡалаһының сиктәрен... Хон-Жай рудниктәренә тиклем ... ды азат итеп, промышленность ... Транг-Бак менән Вонг-Бизе ... алдылар тип тапшыра.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФ...

Өфө ҡалаһы Революционная ... 74-се номерлы йортондағы 2-се ... ла йәшәүсе гражданин Головкин ... Иванович Набережная урамының ... номерлы йортонда йәшәүсе граж... Головкина Евдокия Дмитриевна мен... рылышыу тураһында эш ҡуҙғат... Өфө ҡалаһы Жданов районының ... участка халыҡ судында ҡаралаҫаҡ.

БӨЙӨК ПЛАН БУЙЫНСА

РСФСР һәм БАССР Верховный Советтарына һайлауҙарға әҙерлек кампанияһы йәйелдерелгән осор ине. Беҙгә Октябрьский ҡалаһында йәш һайлаусыларҙың һайлау алды йыйылышында ҡатнашырға тура килде. Унда дүртенсе номерлы промыселдың алдынғы мастеры комсомолец Сабир Маннапов сығыш яһаны. Был сығыш беҙҙең хәтеребеҙҙә онотолмаҫлыҡ булып ҡалды.

— Мин, 1945 йылда Ишембай һөнәрселек училищеһын тамамлағас, Октябрьскийға килдем. Ул ваҡытта әле ҡала түгел, ә бәләкәй поселка ғына ине. Унда эшселәр өсөн яҡшы тормош шарттары ла, культура кимәле лә түбән ине. Эштә лә ҙур ауырлыҡтар һәм ҡыйынлыҡтар булды. Ләкин беҙ уларҙан ҡурҡманыҡ...

Сабир Маннапов йәш нефтселәрҙең фиҙакәр хеҙмәттәре, уларҙың бөтә ҡыйынлыҡтарға ҡаршы уңышлы көрәшеүҙәре тураһында һөйләне:

— Беҙ, нефтселәр, күп инек. Бында улар Ишембай, Баку, Грозный промыселдарынан йыйылғайнылар. Уларҙың бөтә энергиялары, көстәре һәм һәләтлектәре бер маҡсатҡа — нефтте ерҙең тәрән ҡатламдарынан алып халыҡ хужалығының нефть системаларына индереүгә йүнәлдерелгәйне. Беҙ бында яңы ҡала төҙөләсәгенә ул саҡта уҡ ышанғайныҡ инде. Үҙебеҙҙә был яңы ҡаланы төҙөүселәр итеп хис иттек. Һәм ул шулай булды ла. Бураһығыҙ, ниндәй матур ҡала төҙөнөк! Ниндәй яҡшы, социалистик ҡала!.. тине ул.

Йәш мастерҙың «Икенсе Баку» үҙенең тыуыуы һәм үҫеүе тураһында һөйләүе беҙҙе бик ныҡ тулҡынландырҙы. Ул Октябрьскийға шулай уҡ беренсе булып кемдәр килгәнен һәм ҡаланың нигеҙен һалыуҙа кемдәр ҡатнашҡанын да һөйләне.

Ауырлыҡтар... Улар күп булды. Был саҡта әле торлаҡтар ҙа, юлдар ҙа юҡ ине. Эшсе көстәре етешмәне. Ләкин быларҙың бөтәһе лә Башҡортостандың ҡырағай далаһында бөйөк бәхет күтәреләсәгенә тәрән ышаныу менән күмелеп ҡалды.

— Минең ҡалам! Ул — минең ғорурлығым да, бәхетем дә, шатлығым да. Ул миңә ҡиммәт! Сөнки беҙ уның менән бергә үҫтек, бергә тыуҙыҡ һәм хәҙер илебеҙҙә коммунизм төҙөү өсөн бергә ижад итәбеҙ.

Былар — йәш нефтсе, өсөнсө номерлы промыселдың күренекле операторы, комсомолец Тәлғәт Ишмаковтың һүҙҙәре.

«Минең ҡалам». Был ике һүҙҙә генә лә Октябрьский нефтселәренең үҙҙәренең ҡалаһына булған айырыуса ҙур мөхәббәт хистәрен көйләнгәнлек саҡырылар. Сөнки Октябрьский ҡалаһы нефтселәр тарафынан, уларҙың фиҙакәр хеҙмәттәре һөҙөмтәһендә төҙөлгән. Был ике һүҙҙә бик күп мәғәнәне аңлап була. Ысынлап та, әгәр Нарыштау түбәһенән был социалистик ҡалаға ҡараһаң, уның биш йыл эсендә генә оло ҙур ҡала булып күтәрелеп сығыуына ышаныуы ла ҡыйын!

— Ниндәй ижади хеҙмәт менән ҡайнайҙар совет кешеләре! — тип һөйләпә бораулау контораһының долотолар цехы начальнигы, Советтар Союзы Геройы Шакир Ғәтиәтуллин. — Улар мәңге тырағай, буш ятҡан далала ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙенең промышленность предприятиелары менән бөтә Союз күләмендә дан тотҡан ҡала күтәреп сығырға һәләтлеләр.

Бөгөн ҡалала унарлаған промышленность предприятиелары, тамам төҙөлөп бөткән кварталдар, юғары совет архитектураһы нигеҙендә төҙөлгән бер нисә ҡатлы торлаҡ йорттары, административ һәм культура-ағартыу учреждение биналары бар. Октябрьский үҫә. Ул генеральный план буйынса төҙөлә. Әгәр бынан өс йыл элек ҡала үҙәгендә, ҡүберәк, ағас йорттар ғына булһа, ә бөгөн улар ҡала ситендә тороп ҡалалар. Комсомольская, Свердлов, Чапаев, Куйбышев, Островский, Гоголь һәм башҡа яңы урамдар барлыҡҡа килде. Хәҙер Сталин исемендәге проспект ҡыҙыу темптар менән үҫә, культура һәм ял паркы төҙөлдө, ә быйыл Комсомольский паркы төҙөлөп бөтәсәк. Нарыштау башынан ҡарағанда, ҡалала әленән-әле яңылыҡ тыуғанын күрһең. Ул тағы ла матурыраҡ булып үҙгәрә һәм үҫә бара.

Октябрьский Башҡортостандың промышленность ҡалаһы ғына түгел, ә Тыуған илебеҙҙең Көнсығыш районларында бай нефть үҙәге лә булып һанала. «Туймазынефть» тресына Куйбышев, Татарстан, Урта Азия, хатта Баку нефтселәре лә, ай һайын килеп, Октябрьский нефтселәренең эш тәжрибәләрен өйрәнәләр, уларҙың производство яңылыҡтары менән танышалар. Мәскәү ғалимдәре, нефтселәрҙе даими яңы техника менән тәьмин итеүсе илебеҙҙең эре машиналар төҙөү заводтарының вәкилдәре Октябрьский ҡалаһының йыш ҡына ҡәҙерле ҡунаҡтары булып торалар. Туймазы нефтселәре контурлап һыу ебәреү эшенең яңы технологияһын индереүҙә пионер булып сығыш яһанылар. Улар бораулауҙың алдынғы, прогрессив методын — форсированный режимен беренсе тапҡыр киң масштабта производствола ҡулландылар. Октябрьский ҡалаһының бораулау предприятиеларында яңы совет забой двигателе Көнсығыш шарттарҙа киң ҡулланыла. Ул турбобурға ҡарағанда ла ҡеуәтлерәк. Бик күп нефтселәр һәм бораулаусылар — Сталин премияһы лауреаттары. Улар араһында «Туймазынефть» тресы управляющийы Галонский, геологтар Золоев һәм Михайловский, «Башнефтеразведка» тресы управляющийы Потюкаев, бораулау мастеры, Социалистик Хеҙмәт геройы Куприянов иптәштәр бар.

Йәш нефть ҡалаһының данын шулай уҡ нефть промыселдарында, бораулау конторалары һәм төҙөлөш-монтаж майҙандарында эшләүсе ябай кешеләр ҙә тыуҙыралар. Тиҙләтелгән метод менән бораулау мастеры Ҡасим Белянцановтың данын Башҡортостанда кемдәр генә белмәй! Егор Варенов, Мәғруф Хәсәнов, Шәриф Мөхәмәтшин, Буран Ғирфанов һәм уңарлаған башҡа иптәштәрҙең исемдәре республикабыҙҙа ғына түгел, ә Союз күләмендә лә дан алғандар. Улар — Туймазы нефтәнең ветерандары. Был новаторҙар, меңәрләгән башҡа нефтселәр кеүек, республикабыҙҙың төрлө мөйөштәренән Туймазы нефтен үҙләштереү өсөн килгәндәр. Улар — бөйөк рус халҡының туғандары, Ленин — Сталин партияһының һәм хөкүмәтебеҙҙең тоғро улдары. Хәҙер бындай новаторҙар «Икенсе Баку» ҡалаһында күп. Үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәре һәм новаторлыҡтары менән улар Туймазы нефтенең юйылмаҫ тарихына үҙ исемдәрен индерҙеләр.

Йәш нефть ҡалаһы барлыҡҡа килгәндән алып 5 йыл ваҡыт үтте. Ләкин ул үҫеүендә дауам итә. Генеральный планда ҡаралғандар көндән-көн ысынбарлыҡҡа әйләнәләр. Ҡала үҙәгендә матур квадрат майҙан! Совет архитектураһы нигеҙендә төҙөлгән йорттар: культура һәм техника дворецы, Советтар йорто, трест биналары — быларҙың бөтәһе лә өсәр һәм дүртәр ҡатлы. Киң урамдар йәшел бархат менән ҡапланырҙар! Троллейбустар һәм автобустар республиканың бөтә райондарын йәш нефть ҡалаһы менән бәйләрҙәр! Ул республикабыҙҙың һәм башҡорт халҡының мәңгелек ғорурлығы һәм матурлығы булып әүерелер! Октябрьский ҡалаһы генеральный планда шулай күҙаллана. Тағы ла бер нисә йыл!.. Был план тулыһынса тормошҡа ашасаҡ!

Октябрьский — ул һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың емеше. Ҡаланың барлыҡҡа килеүе һәм уны төҙөү — коммунистик төҙөлөш тарихының иң данлы биттәренең береһе. Ул — башҡорт халҡының законлы ғорурлығы.

И. Болдогоев.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, информация һәм совет төҙөлөшө бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01918

Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы.

Тиражы 25.0...

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл
№ 67 (8784)
6
АПРЕЛЬ
йома

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ПРОМЫШЛЕННОСТЬ ҺӘМ ТРАНСПОРТ АГИТАТОРҘАРЫНЫҢ РЕСПУБЛИКА КӘҢӘШМӘҺЕ (1-се бит).

ЯҘҒЫ СӘСЕҮГӘ ӘҘЕРЛЕКТЕ ТИКШЕРӘБЕҘ. И. Ниғмәтуллин.—Бөртөклө ашлыҡ совхоздарында аҡрын ҡуҙғалалар (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ә. Биишев, К. Якупова. — Учреждениеләрҙәге партия ойошмаларының эшенә иғтибарҙы көсәйтергә (2-се бит).

Ғ. Зәлкәрнәев. — Идеология учреждениеләренә етәкселекте яҡшыртырға (2-се бит).

Н. Ғәлимов. — Кадрҙарҙы һайлап алыу һәм уларҙы тәрбиәләү (2-се бит).

ПАРТИЯ ОЙОШМАЛАРЫНЫҢ ЭШ ТӘЖРИБӘҺЕНӘН. Д. Сатлыков. — Партия ойошмаһының колхоз правлениеһе эшмәкәрлегенә контроле (2-се бит).

АУЫЛ СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ ТРИБУНАҺЫ. Н. Ғәлиуллин. — Дәими комиссиялар — ауыл Советенең актив ярҙамсылары (3-сө бит).

Ә. Бикчәнтәев. — Горькнйсә көрәшеү (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ.

Ә. Әхтәмов. — Ужымдарҙы яҙ тәрбиәләү (4-се бит).

Италия коммунистар партияһының VII съезы асылды (4-се бит).

Тыныслыҡ Пакты өсөн! (4-се бит).

Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Яҙғы агротехник сараларҙы уңышлы үткәрәйек!

Беҙҙең илебеҙҙең социалистик ауыл хужалығы алдынғы фән нигеҙендә алып барыла. Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә совет халҡының ихтыяры менән тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планы тормошҡа ашырыла, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре — гидроэлектр станциялары һәм каналдар төҙөлә. Төп Төркмәнстан, Көньяҡ Украина, Төньяҡ Ҡырым һәм Волга-Дон каналдары 28 миллион гектарҙан артыҡ ерҙе һуғарасаҡтар. Илебеҙҙең Европа өлөшөнөң урман-ялан районларында 5 миллион километр самаһы оҙонлоҡта государство урман полосалары, шулай уҡ колхоздарҙың һәм совхоздарҙың сәсеү әйләнештәрендә баҫыу һаҡлаусы урман полосалары, быуалар һәм һыу ятҡылыҡтары барлыҡҡа киләләр. Бөтә был мөһим төҙөлештәр социалистик ауыл хужалығын ҡеүәтле яңы үҫештәргә алып бара.

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планын тормошҡа ашырыуҙың грандиоз программаһы менән рухланған игенселәребеҙ совет фәненә нигеҙләнгән агротехника комплексе эштәрен тулыһынса үтәү өсөн бөтә сараларҙы күрәләр. Сөнки улар тотош майҙандарҙа бөтә культуралар буйынса юғары һәм тотороҡло урожай үҫтереүҙе тәьмин итәләр.

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе бөйөк планын тормошҡа уңышлы ашырыу менән бергә, колхоздарҙа агротехник талаптарҙы теүәл үтәүҙең дә урожайҙы күтәреү өсөн әһәмиәте бик ҙур.

Хәҙер республикабыҙ колхоздарының һәм совхоздарының баҫыуҙарында ҡар һыуҙарын тотоу, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу сараларын ойоштороу менән яҙғы тәүге эштәр башланды. Бүздәк районы Андреев исемендәге колхозда баҫыуға сығыуҙың тәүге көнөндә 50 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо. Бында ужымдарҙы аҙыҡландырыуға әҙерлек эше лә тәьмин ителгән. Быйыл өҫтәмә аҙыҡландырыласаҡ 320 гектар ужым майҙанына етерлек күләмдә органик-минераль ашламалар грануллы әҙерләнгән.

Тупраҡта дым запастары туплауҙа һәм ужымдарҙың яҙғы тәүге үҫешләнеүен аҙыҡ матдәләре менән тәьмин итеүҙә был агротехник эштәр мөһим роль уйнайҙар.

«Баҫыуҙарҙа дым туплау һәм дымды дөрөҫ файҙаланыу өсөн, — тип әйтелә тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планында, — бөтә сараларҙы күрергә, щиталар ҡуйыу һәм башҡа методтар менән эффектле рәүештә ҡар тотоуҙы, валдар ҡороу юлы менән ҡар һыуҙары тотоуҙы, туңға һөрөп ҡалдырылған ерҙәрҙә һәм ҡара пар ерҙәрҙә баҫыу эштәре башланғандан һуң 2 көндән дә һуңламайынса яҙ иртә тырматыуҙы тәьмин итергә, был маҡсаттарҙа волокушаларҙы һәм гвоздевкаларҙы киң ҡулланырға кәрәк».

Яҙғы сәсеүгә әҙерлектең барышы тураһында СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡарарында: **«Ужым культуралары сәсеүлектәрен, күп һағыҙҙың ике йыллыҡ һәм кәҙгә сәсеүлектәрен тәрбиәләү буйынса сараларҙы үҙ ваҡытында әҙерләүҙе һәм үткәреүҙе ойошторорға, ужым ашлыҡтары сәсеүлектәрен урындағы һәм минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы иң күләмдәрҙә үткәреүҙе тәьмин итергә һәм шулай уҡ уларҙы яҙғы осорҙа үҙ ваҡытында тырматыуҙы ойошторорға»** кәрәклеге билдәләнде.

Баҫыуҙарҙа яҙғы ҡар һыуҙарын тотоу һәм ужымдарҙы яҙ иртә өҫтәмә аҙыҡландырыу, ужымдарҙы, туңға һөрөп ҡалдырылған һәм ҡара пар ерҙәрен яҙ тырматыу — агротехника комплексының мөһим эштәре. Юғары урожай мастерҙәре агротехниканың был мөһим сараларына ныҡ иғтибар итәләр. Алдынғы колхоздар баҫыуҙарҙа ҡыш 30—50 сантиметр ҡалынлығында ҡар ятҡырыу һәм яҙ ҡар һыуҙарын тотоп ҡалыу арҡаһында һәр гектарҙан 25 — 30 центнер урожай алалар. Бүздәк районы «Сулпан» колхозы былтыр өҫтәмә аҙыҡландырылған ужымдарҙың һәр гектарынан 1,5-әр центнер өҫтәмә урожай алды. Стәрлетамаҡ районының «Доброволец», «Новый мир» һәм «Украина» колхоздары ҡар һыуҙарын тотоп ҡалыуҙы уңышлы ойоштороу менән юғары урожай үҫтереүҙе тәьмин иттеләр. Өфө тәжрибә баҫыуында ҡар һыуҙары тотолған һәм ашламалар индерелгән майҙанда һәр гектарҙан 4,5-әр центнер өҫтәмә урожай алынды.

Баҫыуҙарҙа яҙғы ҡар һыуҙарын тотоп ҡалыу тупраҡта дым туплауҙың иң бай резервы булып тора. Ҡар һыуҙарын тупраҡҡа һеңдереп ҡалыу өсөн баҫыуҙа ниндәй культура булыуына ҡарап, төрлө ысулдар ҡулланыла. Туңға һөрөлгән, ҡара пар һәм яҙ һөрөләсәк майҙандарҙа бытлауыҡтарға арҡыры 15—30 метр аралыҡлы ҡар валдары нығытыла, полосалап көл йәки тупраҡ һибеү юлы менән һыу тотҡостар эшләнә. Ә ужым һәм күп йыллыҡ үләндәр майҙанында ҡарҙы аҡрынлап иретеү сараһын күрергә кәрәк. Был эш шулай уҡ ужымдарҙы яҙғы иртә һалҡындарҙан һаҡлауға ярҙам итә.

Башҡортостандың күпселек колхоздары һәм совхоздары быйыл ҡыш баҫыуҙарҙа ҡар тотоу пландарын уңышлы үтәнеләр. Хәҙер бурыс шул ҡар һыуҙарын баҫыуҙарҙа тотоп ҡалыуҙы тәьмин итеүҙән тора. Был үҙ ваҡытында һәм ҡыҫҡа срокта үткәреүҙе талап итә. Агрономдар, агротехниктар баҫыуҙарҙа ҡар һыуҙарын тотоуҙы, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы ойоштороуҙа инициатива күрһәтергә тейештәр.

Күпселек колхоздарҙың етәкселәре, хатта ҡайһы бер агрономдар ҙа, быйыл ҡар һыуҙарын тотоп ҡалыу эшенә формаль ҡараныйлар һәм эште тейешенсә ойоштормайылар. Мәҫәлән, былтыр Миәкә районының күпселек колхоздары баҫыуҙарҙа ҡар һыуҙарын тотоуҙы ойоштормаһалар ҙа, уның планын үтәүселәр итеп иҫәпләнделәр. Борай, Хәйбулла һәм башҡа райондарҙа ла бындай формаль ҡараш урын алды.

Быйыл баҫыуҙарҙа яҙғы тәүге эштәрҙе уңышлы ойоштороу өсөн, бөтәһенән элек, ҡар һыуҙарын тотоуҙы ойоштороу эшенә формаль ҡарауға юл ҡуймаҫҡа, агротехниканың был мөһим талабын баһалап еткермәүҙе булдырмаҫҡа кәрәк.

Район ауыл хужалығы бүлектәре, МТС-тар, ауыл хужалығы специалистәре баҫыуҙарҙа дым запастары туплауҙың бөтә формаларын ҡулланыуҙы, беренсе нәүбәттә, яҙғы ҡар һыуҙарын тотоуҙы, шулай уҡ ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы ойоштороуҙа колхоздарға конкрет ярҙам күрһәтергә, был эштәрҙең үтәлешенә ныҡ контроль булдырырға тейештәр. Ә хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советтары һәм ВКП(б) райкомдары был тәңгәлдә колхоздарға контролде көсәйтергә бурыслылар.

ПРОМЫШЛЕННОСТЬ ҺӘМ ТРАНСПОРТ АГИТАТОРҘАРЫНЫҢ РЕСПУБЛИКА КӘҢӘШМӘҺЕ

4 апрелдә Башҡортостандың промышленность предприятиеләрендә һәм транспортта эшләүсе алдынғы агитаторҙарҙың республика кәңәшмәһе асылды. Кәңәшмәлә 300-ҙән артыҡ агитатор ҡатнаша. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар, тәүге көндә Башҡортостандың промышленность предприятиеләрендә һәм транспортында массовый-политик эштең торошо һәм уны артабан яҡшыртыуҙа агитаторҙарҙың бурыстары тураһында ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш С. Сәетбатталовтың докладын тыңланылар. Унан һуң «Туймазынефть» тресының беренсе промыселаһы партия ойошмаһы секретары Тодэйко, Өфө тимер юл узелы партия ойошмаһы секретары Удалов, Өфө электрооборудованиеләре заводы партия ойошмаһы секретары Нәбиуллин иптәштәр үҙҙәренең промысла, тимер юлы узелы һәм завод коллективтарында агитацион-массовый эштең торошо тураһында эш тәжрибәләрен уртаҡлашып, өҫтәмә доклад менән сығыш яһанылар. Кисен кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға республикабыҙҙың смотрҙа иң яҡшы тип табылған художество үҙ эшмәкәрлек коллективтарының көсө менән концерт бирелде.

5 апрелдә кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың эш тәжрибәләрен уртаҡлашыу буйынса фекер алышыуҙары башланды. Беренсе булып сығыш яһаусы, Стәрлетамаҡ станцияһының паровоздар депоһы машинисе, агитатор иптәш Юнысов үҙенең эш тәжрибәһе тураһында һөйләне. Агитаторҙың һүҙе йоғонтоло булһын өсөн, тине ул, агитатор үҙе производствола иң яҡшы эшләүсе булырға тейеш. Шуға күрә, мин партия ойошмаһы тарафынан бирелгән темалар буйынса беседалар үткәргәндә, тыңлаусыларҙың көндәлек эш нормаларын яҡшы сифатлы итеп, арттырып үтәргә саҡырам һәм был өлкәлә үҙемдең эш тәжрибәмде лә һөйләп бирәм.

— Минең партия ойошмаһы, — тине, Стәрлетамаҡ тресы агитаторы иптәш Сазонов, — ФЗО мәктәбен тамамлап сыҡҡан йәш эшселәрҙән торған бригадаға, иптәш Фәрхетдинов етәкселек иткән бригадаға агитатор итеп беркетте. Мин улар менән эшләй башлағанда бригада производство заданиеһен үтәй алмай ине. Агитацион эш алып барыу менән бергә, миңә бөтәһенән элек, эштең насар барыуының сәбәптәрен асырға тура килде. Ысынында бригада эште башлағанға тиклем материалдарҙың алдан килтерелеп, әҙерләнеп ҡуйылмауы арҡаһында, эш көнөнөң күп ваҡыты бушҡа үтеүе, эш урындарында кәрәкмәгән нәмәләрҙең тулып ятыуы, тәртипһеҙлеккә юл ҡуйылыуы асылды. Был етешһеҙлектәрҙе һис кисекмәҫтән бөтөрөү кәрәклеге тураһында бер нисә тапҡыр беседа үткәрҙем. Илебеҙҙә барған бөтә төҙөлештәргә бәйләп, хеҙмәт етештерсәнлеген күтәреү кәрәклеге тураһында үткәрелгән был беседалар ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Хәҙер бригада үҙенең заданиеһен ай һайын 140—150 процентҡа еткереп үтәй.

Унан һуң һүҙ алыусы комсомолка-агитатор иптәш Корнеева (Стәрлетамаҡ) ялҡынлы телмәр менән сығыш яһаны. Ул үҙенең эш тәжрибәләре, коллективының өлгәшкән уңыштары тураһында һөйләгәндән һуң, агитаторҙарҙы май алды социалистик ярышын тағы ла киңерәк йәйелдерергә саҡырҙы.

Өфө телефон аппаратуралары заводы агитаторы иптәш Мухина агитацион-массовый эште иҫәп итеп хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн көрәшкә йүнәлткәнлектәре тураһында һөйләне. Үткән йылдарҙа, — тине ул, — беҙҙең коллективебеҙ йәш һәм аҙ тәжрибәле ине. Шуға күрә, партия ойошмаһы эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм инженер-техник работниктар араһында политик-тәрбиә һәм заводтың производство планын үтәүгә йүнәлдерелгән ойоштороу эштәренә үҙенең төп иғтибарын йүнәлтте. Был эш ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Завод хәҙер рентабелле эшләй торған предприятие булып әүерелде. Массовый-политик эште артабан яҡшыртыу өсөн заводтың библиотекаһын һәм уның уҡыу залын культура үҙәгенә әйләндерергә кәрәк. Ләкин был өлкәлә беҙҙең етешһеҙлектәребеҙ ҙә күп әле.

Кәңәшмәнең 5 апрелдәге ултырышында Октябрьский нефтселәре, Белорет металлургтары, Өфө тимер юлсылары, Черниковск ҡалаһының фанера комбинаты һәм башҡа предприятиеләре, Дәүләкән мель заводы, Мәләүез һөт киптереү заводы һәм республикабыҙ промышленность предприятиеләренең башҡа күп коллективтарынан 26 кеше сығыш яһаны.

5 апрелдә ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш Должных Башҡортостан промышленносының эшендә сифат күрһәткестәрен артабан яҡшыртыу бурыстары тураһында доклад яһаны. Кәңәшмә үҙенең эшен дауам итә.

Һүрәттә: Кәңәшмә залынан бер күренеш.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Баҫыу эштәре көндәлеге

Яҙғы тәүге эштәр

Мраҡ, (телефон аша). Күгәрсен районының Ике йылғаһы буйындағы колхоздары баҫыуҙарҙа яҙғы тәүге эштәрҙе башланылар.

Назар ауыл Советындағы Тельман исемендәге колхоз 3 апрель көндө 30 гектар майҙанда ҡар һыуы тотто. 18 гектар ужымды көл менән өҫтәмә аҙыҡландырҙы. «Красная Нива» һәм «Дружба» колхоздарында ла ҡар һыуҙары тотоу эше ойошҡанлыҡ менән бара.

Сталин исемендәге эреләтелгән колхоздың бөтә 7 баҫыусылыҡ бригадаһы ла баҫыуға сыҡты. Бында туңға һөрөлгән майҙанда 21 пар ат ер тырмата. Колхозда агроном Мостафин һәм агротехник Ваһапов иптәштәр етәкселегендә сәсеү орлоҡтарын ҡояшта йылытыу эше ойошторолдо.

Баҫыуҙарҙа яҙғы тәүге эштәр шулай уҡ Свердлов, Молотов, Димитров исемендәге һәм башҡа колхоздарҙа ла башланды.

М. Мөхәмәдиев.

* * *

Раевка, (телефон аша). Әлшәй районы колхоздарының баҫыуҙарында ҡарҙар бик тиҙлек менән ирей. Колхоздарҙа тупраҡта күберәк дымлыҡ һаҡлап ҡалыу, бигерәк тә бойҙай культуралары сәселәсәк майҙандарға ҡар һыуҙары тотоп ҡалыу өсөн баҫыу эштәре көсәйә бара.

Тельман исемендәге колхоз баҫыуҙарында һәр көн һайын йөҙәр кеше эшләй. Бында ике көн эсендә генә 230 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо. Колхоздың көҙҙән сәсеп ҡалдырған ужым культураларының өҫтәре лә ҡарҙан асыла башланы. Колхозсылар районда беренсе булып көл һибеү юлы менән 100 гектар ужым культураларына өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрҙеләр.

Калинин исемендәге ауыл хужалығы артеленең члендәре көҙҙән туңға һөрөп ҡалдырылған 279 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тоттолар. Шулай уҡ һәр бер гектарына 5-әр центнер көл һибеп, 70 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрҙеләр һәм йәшелсә баҡсаһын ашлау өсөн 10 тонна тиреҫ шыйыҡсаһы сығарҙылар.

Райондың Куйбышев, Салауат Юлаев, Киров, Ленин исемендәге һәм «Ленинская победа», «Красная звезда» колхоздарында ла ҡар һыуҙары тотоу һәм ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу эштәре массовый рәүештә бара.

Ғ. Ғәйнетдинова.

Яҡшы әҙерлек менән

Саҡмағош районы «Трактор» колхозы колхозсылары яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәрен социалистик ярыш нигеҙендә алып барҙылар. Тимерсә Мансуров, Әғзамов иптәштәр һәм башҡа колхозсыларҙың социалистик ярышта алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәүҙәре һөҙөмтәһендә, колхозда яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәре күптән үк тамамланды. 28 һабан, 35 пар тырма, 3 сәскес яҡшы сифатлы итеп ремонтланды.

Бөтә сәсеү майҙанына етерлек орлоҡ таҙартылып, сәсеү кондицияһына еткерелде. Агротехник саралар планы ла арттырып үтәлде.

Ғ. Насиров.

ЯҘҒЫ СӘСЕҮГӘ ӘҘЕРЛЕКТЕ ТИКШЕРӘБЕҘ

БӨРТӨКЛӨ АШЛЫҠ СОВХОЗДАРЫНДА АҠРЫН ҠУҘҒАЛАЛАР

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы күптән түгел совхоздарҙа яҙғы сәсеүгә әҙерлектең торошо буйынса ҡарар ҡабул итте. Шуның нигеҙендә район Советтары исполкомдары һәм совхоздар трестары алдына яуаплы бурыстар — совхоздарҙың яҙғы сәсеүгә әҙерлектәрен тәьмин итеү бурыстарын ҡуйҙы.

Республикабыҙҙың байтаҡ совхоздары, атап әйткәндә, Ҡаҙанғол, Стәрлетамаҡ, «Красная Башкирия», Пәнгел бөртөклө ашлыҡ совхоздары яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәрен тамамланылар. Был хужалыҡтарҙа хәҙер ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн минераль ашламалар әҙерләнә, баҫыуҙарҙа ҡар һыуҙары тотола.

Ләкин, бөртөклө ашлыҡ совхоздары тресы буйынса, тотош алғанда, сәсеүгә әҙерлек эштәре ҡәнәғәтләнерлек ойошторолмаған. Дөрөҫ, бөтә совхоздарҙа ла тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар ремонтлау тамамланған. Трест буйынса сәсеү орлоғо туплау эше лә 105 процентҡа үтәлгән. Ләкин ҙур булмаған шул уңышлыҡтар трест директоры иптәш Ғиләжевтың да һәм ҡайһы бер совхоз етәкселәренең дә баштарын әйләндергән.

Улар тәүге уңыштар менән мауыҡтылар. Сәсеү орлоҡтарын тейешле кимәлдә һаҡлау, юғары кондицияға еткереү сараһын күрмәгәндәр. Орлоҡтарҙың насар һаҡланыуы арҡаһында сығыштары түбәнәйеүе тураһындағы бик күп сигналдар ҙа трест етәкселәрен борсомаған. Һөҙөмтәлә байтаҡ ҡына совхоздарҙың орлоҡтары сәсеүгә яраҡлылыҡ сифатын юғалтҡан. БашЦИК исемендәге, Дәүләкән Раевка һәм Мәсәғүт совхоздарында сәсеү орлоҡтарының сығыштары 50 — 60 процент кенә тәшкил итеүе бына бик асыҡ дәрәҫләй.

Дәүләкән совхозында насар һаҡланыуы арҡаһында бик күп сәсеү орлоҡтарының дымлылығы 22 процентҡа күтәрелгән һәм сығышы 80 процентҡа тиклем кәмегән. Шулай итеп, был орлоҡтар сәсеүгә бөтөнләй яраҡһыҙ хәлгә килгәндәр. Иптәш Ғиләжев һәм трестың баш агрономы иптәш Мамбетов был сериоз сигналдарға тейешле иғтибар итмәгәндәр, улар мәсьәләнең эсенә инеп тикшереүҙе кәрәк тип тапмағандар. Эш, совхоз директоры Сапожников һәм өлкән агрономы Осипов иптәштәрҙе трестҡа саҡырып, үҙ-ара һөйләшеү менән генә хәл ителгән. Иптәш Сапожников трестағы булған беседанан һуң да эште яҡшы итеп ойоштороу сараһын күрмәй. Трест директорының 17 ғинуарҙа орлоҡтарҙы сәсеү кондицияһына килтереү тураһында биргән приказын да үтәмәне. Иптәш Ғиләжев та үҙ приказының үтәлешен тикшереүҙе ойошторманған.

Раевка бөртөклө ашлыҡ совхозында сәсеү орлоғо ер иҙәнле лапаҫ аҫтында һаҡланыуы арҡаһында боҙола башлаған. Трест етәкселәре, быны белһәләр ҙә, ваҡытында тейешле сараларҙы күрмәгәндәр. Трестың өлкән агрономы иптәш Н. Лесдорова совхозға бик күп ваҡыттар үткәс кенә бара һәм орлоҡтарҙы таҡта иҙәнле келәткә ташытыуҙы ойоштора. Ләкин был ваҡытта орлоҡтар сәсеү кондицияһын юғалтҡандар инде инде.

Хәҙер совхоздар үҙҙәренең кондицияһыҙ орлоҡтарын государство ресурстарындағы кондициялы, сортлы орлоҡтарға алмаштырып алырға тейештәр. Ләкин Башҡортостан совхоздарында был эш тә бик аҡрын алып барыла. Дәүләкән совхозында алыштырылырға билдәләнгән 8.300 центнер орлоҡтоң тик 2.000 центнер самаһы ғына алыштырылған.

Трест директоры иптәш Ғиләжев 24 ғинуарҙа совхоздарҙа орлоҡтарҙы алмаштырып алыуҙы ойоштороу тураһында приказ бирә. Ләкин был приказ да тейешенсә үтәлмәй. Мәҫәлән, Мәсәғүт һәм Раевка совхоздары орлоҡтарҙы алыштырыу эшенә ныҡлап тотонмағандар әле. Шул уҡ ваҡытта бында артыҡ дымлы орлоҡтарҙы киптереү, елләтеү юлдары менән сығыштарын күтәреү саралары үткәрелмәй.

Сәсеүгә башлауға һанаулы ғына көндәр ҡалыуға ҡарамаҫтан, трест етәкселәре совхоз директорҙарынан конкрет эш талап итмәйҙәр, эштең үҙ ағышы менән барыуына килешеп ҡарайҙар. Шул арҡала үткән йылғы хаталарҙы ҡабатлау ҡурҡыныс килеп тыуа.

Раевка, Дәүләкән, Мәсәғүт совхоздары былтыр, яҙғы сәсеү эшенә әҙерлекһеҙ төштөләр. Шуның арҡаһында уларҙа яҙғы сәсеүҙең агротехник саралары һаҡланманы. Эске резервтар тулыһынса файҙаланылманы. Машиналар тулы нагрузкала эшләмәнеләр. Һәр бер шартлы тракторға сезон нормаһы 100 — 120 гектарға кәм үтәлде. Эш сифаты насар булды. Һөҙөмтәлә был совхоздар урожай үҫтереү планын һәм государствоға иген тапшырыу йөкләмәһен үтәмәнеләр.

Совхоздарҙа минераль ашламалар туплау эше насар алып барыла. Раевка совхозының директоры иптәш Кузнецов ашламалар ҡулланыуҙы баһалап еткермәй. Бында совхозға наряд буйынса бүленеп бирелгән 180 центнер минераль ашламаның бер килограмы ла алынмаған.

Юғарыла әйтелгән совхоздарҙың етәкселәре партия һәм хөкүмәт тарафынан ышанып тапшырылған эште үтәүҙә инициатива күрһәтмәйҙәр, ғәмһеҙлеккә бирелгәндәр. Был күңелһеҙ хәлде трест та һәм район ауыл хужалығы органдары ла бик яҡшы беләләр. Шулай ҙа уларҙан сәсеүгә әҙерлек эштәрен иң ҡыҫҡа срокта тамамлауҙы талап итмәйҙәр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының совхоздар буйынса яҙғы сәсеүгә әҙерлекте тикшереүҙе ойоштороу тураһындағы ҡарары һәр бер совхоз тарафынан үтәлергә тейеш. Трест һәм совхоз етәкселәренә совхоздар алдында торған мөһим бурысты — юғары урожай үҫтереү бурысын тәьмин итеү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр. Совхоздарҙағы эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланырға, кесле механизацияны тулы нагрузкаһында эшләтергә, яҙғы сәсеүҙе агротехник сроктарҙа үткәрергә кәрәк. Был бик ҙур ойоштороу һәм политик эштәрҙе уңышлы үтәү совхоз директорҙарының эшмәкәрлек һәләтлегенә бәйләнгән.

И. Ниғмәтуллин.

СССР МИНИСТРҘАР СОВЕТЫНДА

ВКП(б)-ның Үҙәк ревизия комиссияһы председателе иптәш М. Ф. Владимирскийҙең иҫтәлеген мәңгеләштереү һәм уның семьяһын тәьмин итеү тураһында

СССР Министрҙар Советы ҡарар итте:

1. РСФСР һаулыҡ һаҡлау министрствоһының Мәскәү өлкә клиника институтына иптәш М. Ф. Владимирский исемен бирергә.

2. Иптәш М. Ф. Владимирскийҙең ҡатыны — Лидия Сергеевна Владимирскаяға 50 мең һум күләмендә бер ваҡытлы пособие бирергә.

3. Иптәш М. Ф. Владимирскийҙең семьяһына түбәндәгесә персональ пенсиялар билдәләргә:

а) ҡатыны — Лидия Сергеевна Владимирскаяға ғүмере буйына ай һайын 2-шәр мең һум күләмендә;

б) һеңлеһенә — Елизавета Федоровна Поповаға ғүмере буйына ай һайын 750-шәр һум күләмендә.

Иптәш М. Ф. Владимирскийҙе күмеү расходтарын государство иҫәбенә алырға.

ВЦСПС СЕКРЕТАРИАТЫНДА

1951 йылда эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәрҙең йәшелсә баҡсалары тураһында

ВЦСПС секретариаты профсоюз ойошмаларына эшселәрҙе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе йәшелсә баҡсаһы өсөн ер участкалары менән тәьмин итеү, уларға орлоҡ материалдары, урындағы ашламалар әҙерләүҙә ярҙам күрһәтеү сараларын күрергә тәҡдим итте.

Һәләк булған воиндарҙың семьяларына һәм Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарына уларҙың йәшәй торған урындарына яҡын һәм иң яҡшы ер участкалары бүленергә, орлоҡ табыуҙа һәм ер һөрөүҙә беренсе нәүбәттә уларға ярҙам күрһәтелергә тейеш.

Профсоюздарҙың комитеттарына эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең йәшелсә баҡсаларында яҙғы сәсеү кампанияһына әҙерлекте йәйелдерергә, ә баҫыу эштәре башланған урындарҙа, уларҙы юғары сифатлы итеп үткәреүҙе тәьмин итергә тәҡдим ителде.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Учреждениеләрҙәге партия ойошмаларының эшенә иғтибарҙы көсәйтергә

Өфө ҡалаһы Киров район партия ойошмаһының X конференцияһында райком секретаре иптәш Киреева отчет доклады менән сығыш яһаны.

— Райондың промышленность предприятиеләрендәге партия ойошмалары,— тине иптәш Киреева, — администрацияның эшмәкәрлегенә контроллек итеү хоҡуҡынан тулыраҡ файҙалана башланылар. Райком бюроһының ултырыштарында һәм тәүге ойошмаларҙың йыйылыштарында производство процестерен яҡшыртыу һәм техника яңылыҡтарын индереү мәсьәләләре күберәк ҡарала башланы. Коммунистар промышленность предприятиеләрендә тағы ла яҡшыраҡ күрһәткестәр биреү өсөн көрәштең алғы сафында баралар. Отчет осоронда районыбыҙҙағы промышленность предприятиеләренең социалистик ярышта беренселектә алыуҙары өсөн беҙҙең районға 3 тапҡыр ВКП(б) ҡала комитетының һәм ҡала Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

Ошо уңыштар менән бер рәттән, — тип дауам итте докладсы, — беҙҙең эшебеҙҙә бик сирьез етешһеҙлектәр ҙа бар әле. Ярма заводы, «Металлист» һәм «Новый быт» артелдәре 1950 йылдың производство планын үтәмәнеләр. Был предприятиеләрҙәге партия ойошмалары эштең артында һөйрәлеп килделәр, массовый-политик эш алып барманылар, эшселәрҙең ижади инициативаһын хуплау һәм уға етәкселек итеү менән ҡыҙыҡһынманылар, социалистик ярышты тик формаль ойоштороу менән генә сикләнделәр.

Учреждениеләрҙәге партия ойошмаларының эшендә лә бик сирьез етешһеҙлектәр бар. БАССР финанс министерствоһының партия ойошмаһы юғары партия ойошмаларының ҡарарҙарын үтәүгә тейешле иғтибар бирмәй, партия йыйылыштарын һирәк һәм әҙерлекһеҙ үткәрә, министерство хеҙмәткәрҙәре коллективының политик белем кимәлен күтәреү эшенә насар етәкселек итә. 11 һәм 14-се мәктәптәрҙең партия ойошмалары уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыу, уҡытыусылар коллективын идеологик тәрбиәләү өсөн тейешле көрәш алып бармайҙар.

Был етешһеҙлектәр, — тип күрһәтте докладсы, — райкомдың һәм уның бүлектәренең партияның тәүге ойошмаларына йомшаҡ етәкселек итеүҙәре, уларҙы төп мәсьәләләрҙе хәл итеүгә юнәлтә алмауҙары, тәүге ойошмаларҙың эшен һирәк тикшереүҙәре һәм уларға эштә етерлек тиклем практик ярҙам күрһәтмәүҙәре арҡаһында килеп тыуҙылар.

Доклад буйынса фекер алышыуҙа сығып һөйләүсе иптәштәр райкомдың эшендә булған етешһеҙлектәрҙе тағы ла тулыраҡ асҡылар һәм уның работниктарын ҡаты тәнҡитләнеләр.

Делегаттарҙан Футерман, Кудряшев һәм башҡа иптәштәр партия мәғарифе селтәрендә булған ҙур етешһеҙлектәрҙе күрһәттеләр. Райком партия мәғарифен яҡшыртыу өсөн үҙенең булған мөмкинлектәрен файҙаланмай. Политик мәктәп һәм түңәрәктәрҙе комплектовать итеүгә яуапһыҙ ҡараған. Тейешле әҙерлеге булмаған кешеләр «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса юғары типтағы түңәрәктәргә беркетелгәндәр. Ҡайһы бер түңәрәктәрҙең составы партия йыйылыштарында раҫланмаған. Райкомдың пропаганда һәм агитация бүлеге үткәрелгән занятиеләрҙең һөкмәткеһенә иғтибар бирмәй, пропагандистарға ярҙам итмәй.

Иптәш Киреева үҙенең докладында учреждение партия ойошмаларының эшендә булған етешһеҙлектәрҙе асып бирә алманы. Сөнки райком учреждение партия ойошмаларының эше менән етерлек ҡыҙыҡһынмаған.

Фекер алышыуҙа ҡатнашыусы делегаттар райкомдың был етешһеҙлеген бик урынлы һәм ҡаты тәнҡиткә алдылар.

Мечников исемендәге институт партия ойошмаһының секретаре иптәш Рябков былай тине:

— Отчет осоронда райком бюроһы беҙҙең партия ойошмаһының эшен барлығы бер генә тапҡыр ҡараны. Унда ла ғилми учреждение партия ойошмаһының тулы әһәмиәтен райкомдың аңлап етмәүе күренде. Сөнки ул беҙҙең эште форма өсөн генә ҡарарға булды.

— Мин өс йылдан бирле мунса һәм кер йыуыу тресы партия ойошмаһының секретаре булып эшләйем, — ти делегат иптәш Абрамов, — ошо ваҡыт эсендә райкомдан бер генә эшлекле ярҙам да алғаным юҡ. Хатта һуңғы отчет-һайлау йыйылышында ла райкомдан бер кеше лә булманы. Райком совет һәм культура, көн-күреш учреждениеләре партия ойошмаларының эшенә етәкселек итеүҙе үҙенең бурысы итеп һанамай.

— Өфөлә берҙән-бер китап магазины бар, — ти делегат иптәш Маннанова, — массаны идеологик яҡтан тәрбиәләү эшендә мөһим ҡорал булған был учреждениенең партия ойошмаһы менән райком ҡыҙыҡһынмай. Райком китап сауҙаһына ла иғтибарҙы көсәйтергә тейеш. Ошо көндә китап магазинын ремонт үткәреү өсөн бикләнеләр. Э ремонт эше башланмаған да әле, ҡасан башланыуы һәм кем башҡарырға тейешлеге тураһында бер нәмә лә билдәле түгел.

Делегат иптәш Гробина райкомдың медицина учреждениеләре партия ойошмаларына насар етәкселек итеүе тураһында һөйләне.

Конференция райкомдың яңы составынан күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙе талап итеп, ҡарар ҡабул итте. Конференциянан һуңғы беренсе пленумда райком секретарҙары итеп Киреева, Ремеев һәм Евдокимов иптәштәр һайланды.

Я. Бикшев.
К. Якупова.

КАДРҘАРҘЫ ҺАЙЛАП АЛЫУ ҺӘМ УЛАРҘЫ ТӘРБИӘЛӘҮ

ВКП(б)-ның Мәсетле район конференцияһы делегаттары район партия ойошмаларының эшмәкәрлегенә анализ яһап, үҙҙәренең сығыштарында хужалыҡ һәм политик-тәрбиә эштәренең байтаҡ уңышлы яҡтарын билдәләп үттеләр.

ВКП(б) райкомы секретаре иптәш Ғилманов үҙенең отчет докладында эреләтелгән колхоздарҙың беренсе уңыштары тураһында туҡталып, былай тине:

— Баҫыу эштәрен механизациялауҙың кимәле күтәрелде, резервтарҙы тулыраҡ файҙаланыу өсөн яңы мөмкинлектәр тыуҙы.

Сығыш яһаусы делегаттар райком бюроһының эшендәге етешһеҙлектәрҙе айырыуса билдәләп үттеләр. Улар кадрҙарҙы һайлап алыу һәм уларҙы дөрөҫ урынлаштырыу, партия активын большевистик тәрбиәләү, масса араһында политик эш алып барыуҙағы етешһеҙлектәрҙе ҡыйыу тәнҡитләнеләр. Делегаттар райкомдың кадрҙарҙы тәрбиәләү эшен баһалап еткермәүен әйтеп, райондың хужалыҡ һәм культура төҙөлеш бурыстарын уңышлы хәл итеү тап бына ошо кадрҙарға бәйләнгән, тип күрһәттеләр. Үҙған йыл райондың колхоздары урожайлылыҡты күтәреү планын үтәмәнеләр. Райком бюроһы әле булһа ауыл хужалығына етәкселектең ярамаҫ методтарынан арына алғаны юҡ. Тәүге партия ойошмалары секретарҙарының эшмәкәрлеге систематик тикшерелмәй. Райком бюроһы уларҙың отчеттарын тик хужалыҡ кампанияларының барышы айҡанлы тыңлау менән генә сикләнә.

Большевик исемендәге эреләтелгән колхоз партия ойошмаһы секретаре иптәш Ғәзизов райкомды кадрҙар менән эшләүгә аҙ иғтибар иткәне өсөн тәнҡитләне.

— Былтыр, — тине ул, — 35 гектар иген ҡар аҫтында ҡалды. Урожай үҫтереп алыу планы үтәлмәне. Растов ауыл Советы председателе Охьянов колхоз производствоһы мәсьәләләренән бөтөнләй ситләште. Ә район Советы исполкомы уның эше менән ҡыҙыҡһынмай, райком иһә, уны белә тороп, килешеп ҡараны.

— Беҙҙең районда, — тине район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Заһидуллин, — юғары белемле ауыл хужалығы специалистары етешмәй. Райком бюроһы һәм уның ауыл хужалығы бүлеге ауыл хужалығы кадрҙарын әҙерләү мәсьәләһенә йомшаҡ етәкселек итә. Эреләтелгән колхоздарға председателдәр һайлап алыуға иғтибар етерлек булманы. Һөҙөмтәлә хәҙер байтаҡ ҡына колхоз председателдәренең ҙур хужалыҡ менән ныҡлап етәкселек итә алмауҙары беленде.

Куйбышев исемендәге эреләтелгән колхозға председатель итеп әлекке ауыл Советы председателе иптәш Закиров һайланды. Уның эшләй башлауына инде күп кенә ваҡыт үтеп китте. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, колхоз артта ҡала, яҙғы сәсеүгә әҙер түгел, ә иптәш Закиров мунаҡҡа йөрөүҙән бушамай. Молотов исемендәге колхоз председателе иптәш Хатипов үҙенең белем кимәлен күтәреү өҫтөндә эшләмәй, ауыл хужалығын белмәй, колхозға етәкселек итмәй. Райком эреләтелгән колхоздарға председатель итеп партия һәм совет активынан хужалыҡты яҡшы белгән, һәләтле кешеләрҙе ебәреүгә етерлек иғтибар итмәне.

Кадрҙарҙы тәрбиәләү һәм уларҙы үрләтеү эшендәге сирьез етешһеҙлектәр тураһында Мәсетле МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары Ғиззәтуллин, ВКП(б) райкомының ауыл хужалығы бүлеге мөдире Вәйсов, Ләмәҙ Тамаҡ урта мәктәбе директоры Фәйзов, Калинин исемендәге колхоз председателе Фаззалов һәм башҡа иптәштәр һөйләнеләр. Улар үҙҙәренең сығыштарында кадрҙарҙы йыш алыштырыу, уларҙы тәрбиәләү эшенә райкомдың етерлек иғтибар итмәүе тураһында әйттеләр һәм бигерәк тә райпотребсоюз аппаратын ҡаты тәнҡиткә алдылар. Райпотребсоюз совет сауҙаһын тупаҫ боҙоусы кешеләр менән сүпләнгән, бында 100 мең һумға яҡын растрата яһалған. Райпотребсоюз председателе иптәш Новаселов үҙ тирәһенә төрлө растратчиктарҙы йыйнаған.

Делегаттар шулай уҡ райкомдың ҡатын-ҡыҙҙарҙы етәкселек эштәренә үрләтеүгә етерлек иғтибар итмәүе тураһында әйтеп киттеләр.

Күп кенә иптәштәр райком бюроһының район газетаһында сыҡҡан тәнҡит материалдарын һанға һуҡмауы тураһында һөйләнеләр.

Райком секретаре иптәш Темониндең тәнҡитте тик һүҙҙә генә ҡабул итеп, уны етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә файҙаланмауын, уның тәнҡитте ҡыҫырға ынтылыуын айырыуса билдәләп үттеләр.

Делегаттар районда механизаторҙар кадрҙарын һәм эреләтелгән колхоздарҙың етәксе кадрҙарын әҙерләүгә аҙ иғтибар ителеүен, был мәсьәләлә райкомдың үҙенә тейешле һығымта яһарға тейешлеген билдәләнеләр.

Конференциянан һуң райкомдың беренсе пленумы райком секретарҙары итеп С. Ғилманов, С. Темонин, М. Ғафаров иптәштәрҙе һайланы.

Н. Ғәлимов.

Идеология учреждениеләренә етәкселекте яҡшыртырға

Өфө ҡалаһы Жданов район партия ойошмаһының IX конференцияһы булып үтте. Конференция ВКП(б) район комитетының эше тураһында райком секретаре иптәш Герасимовтың отчетын тыңланы.

Республикабыҙ башҡалаһының Жданов районында республикабыҙҙың мөһим идеологик учреждениеләренең иң ҙур күпселеге тупланған. Был район территорияһында өс юғары уҡыу йорто, өс театр, ике ғилми-тикшеренеү институты һәм уҡытыусыларҙың квалификацияһын күтәреү институты, күп һанда урта мәктәптәр, техникумдар һәм күп төрлө культура-ағартыу учреждениеләре эшләйҙәр. Республикабыҙҙа идеология эшенең торошо күпселек осраҡта ошо идеологик учреждениеләрҙең эштәренә бәйләнгән. Бына шуға күрә был район конференцияһы идеология учреждениеләренә етәкселекте көсәйтеү билдәһе аҫтында үтте.

Фекер алышыуҙа 22 делегат сығыш яһаны. Улар ВКП(б) райкомын юғары уҡыу йорттары партия ойошмаларына етәкселектең етерлек булмауы, райком етәкселәре предприятиеләрҙә булып та массалар менән аҙ осрашыуҙары, профсоюздарға етерлек ярҙам күрһәтелмәүе өсөн ҡаты тәнҡитләнеләр.

Делегаттарҙан Миңнеғәлиев (искусство управлениеһе начальнигы) һәм Вахитов иптәштәр (Башҡорт государство академия театры партия ойошмаһы секретаре) ВКП(б) район комитетын искусство учреждениеләренә аҙ иғтибар бирә, тип тәнҡитләнеләр.

ВКП(б) райкомы бюроһы Башҡорт академия театрының эше менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай. Театр партия ойошмаһының эше тураһында бюрола бер генә тапҡыр ҙа отчет тыңланғаны юҡ. Шул уҡ ваҡытта театрҙа бик ҙур етешһеҙлектәр йәшәп килә һәм театр партия ойошмаһы райкомдың ярҙамына бик мохтаж, — тине иптәш Вахитов. Ул «Минең йырым» спектакле менән булған хәлде миҫалға алып, «әгәр берәр завод йәки берәр артель брак сығарһа, райком уның менән шунда уҡ шөғөлләнер һәм ғәйеплеләргә сара күрер ине. Ә бына театр етлекмәгән пьесаны ҡуйып бер нисә мең һум зыян күрҙе. Ләкин был хәл райкомдың иғтибарынан ситтә ҡалды. Беҙ ВКП(б) райкомы работниктарының театр менән ҡыҙыҡһыныуын, унда тамашасы сифатында түгел, ә етәксе сифатында булғылауын теләйбеҙ», — тине.

Делегаттарҙан Щерстенников (медицина институты профессоры), Маслов (пединститут партия ойошмаһы секретаре), Пластова (ауыл хужалығы институты партия ойошмаһы секретаре), Ушаков (мединституттың марксизм-ленинизм кафедраһы мөдире) иптәштәр райкомды юғары уҡыу йорттарының партия ойошмаларына етерлек ярҙам күрһәтмәүе өсөн тәнҡитләнеләр.

— Ауыл хужалығы институты, — тине иптәш Пластова, — үткән йылда фәнни эштәр планын үтәмәне. Был, партия ойошмаһының институттың фәнни эштәре өҫтөнән контроллек итмәүенең һөҙөмтәһе. Партия ойошмаһы был эш менән аҙ шөғөлләнде. Ғилми-тикшеренеү эштәрен үтәмәгән иптәштәрҙе бер генә тапҡыр ҙа тикшермәнек. Ә ВКП(б) райкомы беҙҙән уны ныҡлап талап итмәне.

Делегат Нафиков (ВКП(б) ҡала комитеты секретаре) Жданов районындағы юғары уҡыу йорттарында профессор-преподавателдәр составын марксистик-ленинсе тәрбиәләүгә туҡталды. Һәм юғары уҡыу йорттарының, бигерәк тә Башпединститут профессорҙары, преподавателдәре иптәш Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» исемле гениаль хеҙмәте нигеҙендә үҙҙәренең эштәрен ҡайтанан ҡарап сығырға, иптәш Сталиндең хеҙмәттәрен практикала ҡулланырға тейештәр, тип билдәләне.

Делегаттарҙан Кандратьев, Семинешева, Сиразиев, Радзюк иптәштәр ВКП(б) райкомының промышленность предприятиеләрендәге партия һәм профсоюз ойошмаларына квалификациялы етәкселеге етерлек түгел, тип тәнҡитләнеләр.

Конференция аҙағында ВКП(б) Өлкә Комитеты секретаре, делегат иптәш Сәйтбатталов сығыш яһап, идеология учреждениеләренең партия ойошмаларына етәкселек итеүҙә ВКП(б) район комитетының етешһеҙлектәрен тәнҡитләне һәм ул етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү юлдарын күрһәтеп үтте. ВКП(б) райкомы вуздарҙа тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙең ижади атмосфераһын тыуҙырыуҙа, вуз партия ойошмаларына ярҙам итергә һәм уларҙың эштәренә юнәлеш бирергә тейеш, тине.

Конференция делегаттары ҙур күтәренкелек менән иптәш Сталинға котлау хаты ҡабул иттеләр.

Конференция ВКП(б) район комитетының яңы составын, ревизия комиссияһын һәм ВКП(б) Өфө ҡала конференцияһына делегаттар һайланы.

ВКП(б) Жданов райкомының яңы составының беренсе пленумы район комитетының секретарҙары итеп Герасимов, Фархетдинова, Билалов иптәштәрҙе һайланы.

Ғ. Зәлһарнеев.

Райком үҙ ҡарарҙарының үтәлешен тикшермәй

ВКП(б)-ның Күгәрсен район конференцияһы булып үтте. Конференцияла отчет доклады менән райком секретаре иптәш Д. Печкорин сығыш яһаны.

— Отчет осоронда, — тине докладсы, — районыбыҙҙың колхоздары партиябыҙ һәм Совет хөкүмәте күрһәткән ярҙамдар арҡаһында юғары урожай алыуға өлгәштеләр. Райондың колхоздары государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда үтәнеләр һәм үҙҙәрен етерлек тиклем сәсеү орлоғо менән тәьмин иттеләр. 1949 йылға сағыштырғанда, район буйынса мөгөҙлө эре малдар һаны 16,7, йылҡылар һаны 13,3, һарыҡ һәм кәзәләр һаны 33,4, сусҡалар һаны 115,2 процентҡа үҫте.

Отчет доклады буйынса фекер алышыуҙарҙа ҡатнашыусы делегаттар райкомдың эшендәге етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләп сыҡтылар.

Делегаттарҙан Черкашин (Назар ауыл Советы председателе), Сергеев (Свердлов исемендәге колхоздың партия ойошмаһы секретаре) һәм башҡа иптәштәр районда партия пропагандаһы эшенең йомшаҡ ҡуйылыуы, культура-ағартыу эшенә әһәмиәт бирелмәүе, колхоздарҙа агрозоотехник уҡыуҙы ойоштороуға район ауыл хужалығы бүлегенең иғтибарһыҙ ҡарауы тураһында һөйләнеләр. Улар, бигерәк тә, райкомдың үҙе сығарған ҡарарҙарының үтәлешен ваҡытында тикшереп бармауын билдәләп үттеләр.

Конференциянан һуң райкомдың беренсе пленумы Печкорин, Ҡарамышев һәм Федотов иптәштәрҙе ВКП(б) райкомының секретарҙары итеп һайланы.

Х. Дәүләтшин.

Тотош электрләштерелгән район өсөн

Беҙ 1952 йылда Белорет районын тотош электрләштереү эшен планлаштырҙыҡ. Быға тиклем ошо юнәлештә байтаҡ эш эшләнде лә инде.

Колхоздарҙы, ауылдарҙы электрләштереү эшендә беҙгә металлургия комбинаты ҙур ярҙам итә. Тау башлап, Белорет металлургия комбинатының леспромхоздары, тимер юл станциялары тирәһендә урынлашҡан ауылдар, колхоздар электрләштерелде.

Юғары Әүжән, Түкән, Егәҙе, Йәй... ауыл Советтарына ингән ауылдар электроэнергияны промышленность объекттары аша алалар.

Үткән йыл металлургия комбинатының яҡындан тороп практик ярҙам күрһәтеүе арҡаһында тағы ике колхоз электрләштерелде. Молотов, Калинин исемендәге колхоздар электр уты алдылар. Был эреләтелгән колхоздарҙа электр колхозсыларҙың өйҙәрен һәм общественный торлаҡтарҙы яҡтыртыуҙан тыш колхоз производствоһына индерелә.

Хәҙер беҙ колхоздарҙа гидростанциялар төҙөү эшен йәйелдереп ебәрҙек. Райондағы көслө йылғалар беҙгә был эште уңышлы итеп ойоштороу мөмкинлеге бирә.

Эреләтелгән «Победа» колхозында 120 киловатлыҡ гидростанция төҙәлә. Был станция Ҡаға йылғаһында төҙәлеп, ҡыштлыҡса «Ҡыҙыл Урал» колхозын хеҙмәтләндерәсәк. Ә был колхоз 1952 — 53 йылдарҙа Ағиҙел йылғаһында 200 киловатлы үҙ станцияһын төҙөүҙе планлаштырҙы.

Сталин исемендәге колхоз Үҙән йылғаһында 150 киловатлы бер станция төҙөү эшен планлаштырҙы.

Был станциянан Ҡамышаҡ колхозы энергия аласаҡ.

Шулай итеп, беҙҙең районда электрләштерелмәгән өс кенә колхоз ҡала. Беҙ был эште 1952 йылда тамамларға тырышабыҙ.

Ғ. Усманов.
Белорет район Советы исполкомы председателе.

Металл һыныҡтары йыйнау

«Башнефтестрой» тресының конторалары һәм управлениеләрендә металл һынығтары йыйнау эше киң йәйелдерелде. 1951 йылдың беренсе квартал планы ҡара металл буйынса 100 процентҡа, төҫлө металл буйынса 200,5 процентҡа үтәлде.

Металл йыйнау эшендә 1-се номерлы төҙөү-монтаж управлениеһе коллективы бигерәк тә яҡшы эшләй. Унда 67 тонна ҡара металл йыйналып, заготпунктҡа тапшырылды.

Автотранспорт конторалһы коллективы төҫлө металл йыйнау планын күп мәртәбә арттырып үтәне. Ул квартал планында ҡаралған 82 килограмм урынына 733 килограмм төҫлө металл йыйнап, заготпунктҡа тапшырҙы.

Тресттың бөтә конторалһында һәм управлениеләрендә металл йыйнау эше календарь график менән алып барыла.

Металл йыйнау һәм йыйналған металдарҙы заготпунктҡа тапшырыуҙа комсомолецтар актив ҡатнашалар. Комсомол ойошмаһы металл йыйнауҙың барышы тураһында мәсьәлә тикшергәндән һуң, ошо көндәрҙә йәштәр менән ике тапҡыр субботник үткәреп, пландан тыш 100 тонна металл йыйнап, заготпунктҡа тапшырырға ҡарар итте.

Ш. Мостафин.

Агитаторҙар семинары

ВКП(б)-ның Зианчура райкомы агитаторҙар өсөн семинар үткәрҙе. Семинарҙа колхозсылар һәм механизаторҙар араһында агитацион-массовый эш ойоштороу мәсьәләһе өйрәнелде, лекциялар, докладтар үткәреү өсөн тематика билдәләнде. Алдынғы агитаторҙар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар. Агитаторҙарҙан Волков, Палкин һәм башҡа иптәштәр үҙҙәре беркетелгән трактор бригадаларында агитацион-массовый эште айырыуса яҡшы ойошторғандар. Был бригадаларҙа Иван Бупреевтең эш алымдарын өйрәнеү бара, тракторсылар араһында май айы социалистик ярышы киң йәйелдерелде.

Яҙғы сәсеүгә әҙерлекте тикшереү өсөн үткәрелгән смотр был бригадаларҙа эштең яҡшы ойошторолоуын күрһәтте.

Ф. Солтанов.

* * *

ВКП(б)-ның Хәйбулла райкомы ... урында агитаторҙарҙың куст кәңәшмәләрен үткәрҙе. Кәңәшмәлә 338 агитатор ҡатнашты. Улар «Яҙғы сәсеү осоронда агитаторҙарҙың бурыстары» һәм «Халыҡ-ара хәл» тураһында доклад һәм лекциялар тыңланылар. Докладтан һуң алдынғы агитаторҙар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Р. Шафикова.

Студенттәр практикаһы

Башҡорт государство педагогия институтының III курс студенттәре Өфө мәктәптәрендә бер айҙан артыҡ практикала булдылар. Студенттәр практикала мәктәптәрҙә уҡыусыларға дәрес бирергә үҙҙәренең һәләтлектәрен күрһәттеләр. Студенттәр араһында Ғүмәров, Киселев, Г...ева һәм Сафиуллин иптәштәр дәрес биреүҙә айырыуса яҡшы уңыштарға өлгәштеләр.

А. Абдуллин.

Партия ойошмаларының эш тәжрибәһенән

ПАРТИЯ ОЙОШМАҺЫНЫҢ КОЛХОЗ ПРАВЛЕНИЕҺЕ ЭШМӘКӘРЛЕГЕНӘ КОНТРОЛЕ

Беҙҙең эреләтелгән «Коммунар» колхозында партияның тәүге ойошмаһы хәҙер 31 коммунистан тора. Ойошма менән биш кешенән һайланған партбюро етәкселек итә. Партбюро составына партия ойошмаһының иң алдынғы, иң әҙерлекле кешеләре һайландылар. Колхозда 47 кешене эсенә алған комсомол ойошмаһы бар.

Партия һәм комсомол ойошмалары күптән түгел эреләтелгән колхоз хужалығын нығытыуҙа ҙур ойоштороусы политик көс булып торалар. Коммунистар, комсомолецтар колхоздың хәл иткес производство участкаларында эшләйҙәр. Коммунист Исәнбаев баҫыусылыҡ бригадаһы менән етәкселек итә. Уның бригадаһы яҙғы сәсеүгә әҙерлек эшендә һәм бүтән төрлө производство мәсьәләләрендә башҡа бригадаларға өлгө күрһәтә.

Сатлыков, Яруллин иптәштәр малсылыҡ-тауар һәм йылҡысылыҡ фермалары мөдирҙәре итеп билдәләнделәр. Был фермаларҙа малдарҙы яҡшы ҡышлатып сығарыу өсөн ныҡышмалы көрәш ойошторолған. Комсомолецтарҙан күбеһе малсылыҡ фермаларында, баҫыусылыҡ бригадаларында эшләйҙәр. Мостафин, Зәбәйдуллин, Ҡанафин кеүек алдынғы комсомолецтар бөтә колхозсы йәштәр өсөн өлгө булып торалар.

Беҙҙең колхоз алдында общественный малдарҙы юғалтыуһыҙ ҡышлатып сығарыу һәм яҙғы сәсеүгә ойошҡан рәүештә әҙерләнеү бурыстары тора ине. Партия ойошмаһы беренсе нәүбәттә малдар өсөн нормаль ҡышлатыу шарттары тыуҙырыу хәстәрлеген күрҙе. Берләшкәндән тәүге көндәрендә үк был мөһим мәсьәлә ойошманың партбюро ултырышында ҡуйып тикшерелде, унан һуң дөйөм йыйылышта ҡаралды.

Малсылыҡ-тауар фермаһы менән етәкселек итеүсе коммунист Яруллиндың отчеты партбюро ултырышында тикшерелеп, был мәсьәлә буйынса махсус ҡарар ҡабул ителде. Тикшереү һөҙөмтәһендә фермаларҙа малдарҙың ябыға башлауы асылды, мал аҙыҡтарын әрәм-шәрәм итеү фактары фаш ителде. Фермала эште төҙәтеү нигеҙендә партия-комсомол группаһы ойошторолдо. Был группа менән ветсанитар коммунист иптәш Аллаяров етәкселек итә. Партия группаһы малсылыҡ работниктары араһында хеҙмәт дисциплинаһын күтәреү, мал ҡарауҙы яҡшыртыу буйынса колхозсылар араһында массовый-политик саралар үткәреүҙе киң йәйелдерҙе. Бында һәр биш көн һайын боевой листок сығарыла, малсылыҡ работниктарының производство кәңәшмәләре, дөйөм йыйылыштары үткәрелә. Ошо арҡала ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ферманың эше байтаҡҡа яҡшырҙы һәм был ферма үҙенең эшен башҡалар өсөн өлгөлө итеп ойошторҙо.

Колхоздың 800 башҡа яҡын йылҡы малын коммунист иптәш Фахретдинов етәкселек иткән ферма коллективы ҡарай. Был коллектив быйыл йөҙ бейәнән 90 ҡолон алып үҫтереү өсөн ныҡышмалы көрәш алып бара. Ошо көндәрҙә бейәләр ҡолонлай башланылар, ләкин ҡолондар өсөн яраҡлы торлаҡтар етешмәүе күренде. Колхоз правлениеһе быға үҙ ваҡытында иғтибар итмәгән. Партия ойошмаһы, колхоз правлениеһе менән берлектә, бик тиҙ арала ҡолондар өсөн торлаҡ булдырыуҙы ойошторҙо.

Партияның тәүге ойошмаһы колхоз правлениеһенең яҙғы сәсеүгә әҙерлек менән етәкселек итеү, был мөһим эште ойоштороу эшмәкәрлеген көндәлек контроль аҫтында тота. Күптән түгел партбюро ултырышында яҙғы сәсеүгә әҙерлектең торошо тураһында колхоз председателе коммунист иптәш Ғилмановтың информацияһы тыңланды. Был мәсьәләне партбюро ултырышына беҙ алдан ентекләп әҙерләнек. Ултырышта яҙғы сәсеүгә әҙерлектең ситтән тыш насар тороуы күрһәтелде. Күпселек сәсеү орлоғо таҙартылмаған, кәрәкле кондицияға килтерелмәгән. Хужалыҡ инвентарҙары етеш түгел. Һабандар, сәскестәр һәм башҡа ауыл хужалығы машиналары ремонтланып бөтмәгән.

Был етешһеҙлектәрҙе тиҙ арала бөтөрөү өсөн партия ойошмаһы хәл иткес саралар күрҙе. Орлоҡтарҙы таҙартыу, кәрәкле кондицияға килтереү эшенә коммунистар беркетелде. Колхоз правлениеһе хужалыҡ инвентарҙарына ремонт үткәреүҙе яҡшыртты һәм яңы һабандар, сәскестәр, мисәү сиптәре һатып алды.

Тағы ла дүрт көндән һуң партбюро ултырышы ҡарарының үтәлешенә арнап партия ойошмаһының дөйөм йыйылышы үткәрелде. Был йыйылышта коммунистар яҙғы сәсеүгә әҙерлек менән етәкселек итеүҙә колхоз правлениеһенең етешһеҙлектәрен ҡаты тәнҡиткә алдылар. Йыйылыш яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәрен биш-алты көн эсендә тамамлауға юнәлтелгән ҡарар ҡабул итте.

Хәҙер колхоздың яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәре тамамланды инде. Булған орлоҡ фондын талап ителгән кондицияға еткереү өсөн сирьез саралар күрелде. Бының өсөн ашығыс рәүештә Гоголев системаһындағы яңы иген киптергес төҙәргә тура килде. Төҙөлөш эшендә коммунистар иң актив ҡатнашып эшләүселәр булдылар. Эш аттары алға ҡуйылдылар. Өҫтәмә хужалыҡ инвентарҙары һатып алыуҙан тыш, ике яңы сәскес, өгермәләп тырма һәм башҡа кәрәкле хужалыҡ ҡоралдары алынды.

Беҙгә быйыл 2877 гектар майҙанда яҙғы сәсеү үткәрергә тура киләсәк. Уның 1900 гектарын аҙ һөрөп сәсәбеҙ. Колхоз үҙенең алдына яҙғы сәсеүҙе 12 эш көнөндә тамамлау бурысын ҡуйҙы. Партияның тәүге ойошмаһы хәҙерҙән үк был ҙур бурысты юғары ойошҡанлыҡ менән үтәп сығыу өсөн сирьез хәстәрлектәр күрә. Трактор бригадаларын кәрәкле кадрҙар менән тәьмин итеүҙе, механизаторҙар араһында үҙ-ара социалистик ярыш йәйелдереүҙе партия ойошмаһы үҙенең күҙ уңында тота.

Партия ойошмаһының туранан-тура ҡатнашлыҡ итеүе менән колхоз правлениеһе үҙ ултырыштарында, дөйөм йыйылыштарҙа хужалыҡ өлкәһендәге теге йәки был мәсьәләләрҙән тыш государство әһәмиәтенә эйә булған мәсьәләләр менән дә шөғөлләнә. Ошо көндәрҙә пенсионерҙарға ярҙам күрһәтеү айнаһы үткәрелде. Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған воиндар семьяларының йорттарын төҙәтеп, ҡырҡтан артыҡ семьяға бесән, утын килтереп бирҙек.

Алға барған һайын эреләтелгән колхоз ауылы алдындағы бурыстар ҡатмарлана һәм ҙурая барасаҡ. Был колхоз партия ойошмаһынан тағы ла ныҡышмалыраҡ эш алып барыуҙы, айырыуса колхоз правлениеһе эшмәкәрлегенә контролде артабан яҡшыртыуҙы талап итәсәк. Беҙ был сирьез бурыстарҙы хәл итергә әҙербеҙ.

Д. Сатлыков,
Учалы районы «Коммунар» колхозының партия ойошмаһы секретаре.

Михаил Федорович Владимирскийҙе күмеү

[illegible]

Иптәш М. А. Суслов телмәре

[illegible]

Иптәш П. Н. Поспелов телмәре

[illegible]

Иптәш И. И. Румянцев телмәре

[illegible]

(ТАСС).

Ауыл Советы председателе трибунаһы

Даими комиссиялар—ауыл Советенең актив ярҙамсылары

Беҙҙең ауыл Советы Сәкмағош районының иң ҙур Советтарынан иҫәпләнә. Уның территорияһына 8 ауыл инә. Ике эреләтелгән ауыл хужалығы артеле бар.

1950 йылдың декабрендә урындағы Советтарға булып үткән һайлауҙарҙан һуң ауыл Советының беренсе сессияһында Советтең бер нисә даими комиссияһы төҙөлөп, уның тирәһендә ҙур актив тупланды. Ауыл Советы политик-хужалыҡ кампанияларҙы уңышлы үткәреүҙә һәм эреләтелгән колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуҙа үҙенең даими комиссияларына һәм активҡа таяныр эш итә. Шуға күрә ауыл Советы һайлауҙар үтеүҙән тәүге көнөнән үк был комиссияларҙың эшен йәйелдереп ебәреүгә, уларға оператив етәкселек итеүгә бик ҙур иғтибар бирҙе. Һөҙөмтәлә, беҙ даими комиссияларҙың нығылы план нигеҙендә эшләүҙәренә, ауыл Советының актив ярҙамсыһы булып әүерелеүҙәренә өлгәшә алдыҡ.

Миҫал өсөн ауыл хужалығы буйынса даими комиссияның эшен алырға мөмкин. Депутат Хәсәнйәнов етәкселек иткән был комиссия биш кешенән тора. Комиссия члендары бөтәһе лә колхоз производствоһының төрлө яуаплы тармаҡтарында эшләп, башҡаларға хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Мәҫәлән, комиссия члендары депутаттар Елена Усмжанина, Нәғимә Мажитова эреләтелгән «Холодный ключ» колхозының мәк үҫтереү звенолары менән етәкселек итәләр. Был звенолар уражайҙы күтәреү өсөн бөтә агротехник сараларҙы үткәрҙеләр. Депутат Тимерьян Сәлимов — тракторист. Ул дизель тракторында эшләп, йыллыҡ планды һәр ваҡыт арттырып үтәй. Быйыл ул үҙ тракторын яҡшы сифатлы ремонтлап күптән үк инде колхозға илтеп ҡуйҙы. Депутат Яхъя Даутов — колхоз фермаһына мал аҙығы ташый.

Комиссияның башҡарма комитет тарафынан раҫланған айлыҡ эш планы бар. Эреләтелгән колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуҙа, уларҙың яҙғы сәсеүгә өлгөлө әҙерләнеүҙәрендә комиссия байтаҡ практик саралар башҡарҙы. Ауыл Советына ингән колхоздар 1951 йылдың яҙғы сәсеүенә етерлек тиклем орлоҡ һалып ҡуйҙылар һәм уны тейешле кондицияһына еткерҙеләр. Ауыл хужалығы машиналары һәм инвентарҙары ремонтланған.

Март айы өсөн төҙөлгән эш планында комиссия эреләтелгән «Холодный ключ» һәм Сталин исемендәге колхоздарҙа яҙғы сәсеүгә әҙерлектең торошон тикшереүҙе индергәйне. Ауыл хужалығы комиссияһы тарафынан 18 мартта үткәрелгән тикшереү ҡайһы бер инвентарҙарҙың ремонт сифаты түбән булыуын асты. Сталин исемендәге колхозда 4 тырмаға ҡайтанан ремонт үткәрергә тәҡдим ителде. Комиссия члендары колхоздарҙа сәсеү орлоҡтарының дәрес һаҡланыуын даими тикшереп тороу эшен ойошторҙолар.

Общественный малдар һанын арттырыу һәм уның продуктивлеген күтәреү өлкәһендә лә комиссия колхоздарға ҙур ярҙам күрһәтә. Ауыл Советына ингән колхоздарҙа малсылыҡты үҫтереүҙең государство планы арттырып үтәлде: Ҡолондар алыу планы 107, мөгөҙлө эре малдар — 101, сусҡалар — 108 процент тәшкил итә. Колхоз фермаларында даими кадрҙар булдырыу мәсьәләһенә нығылы иғтибар бирелә. Комиссия члендары малсылыҡ работниктары араһында агит-массовый эш алып баралар. Сталин исемендәге колхоз фермаларында Ислам Яруллин сусҡа ҡараусы булып, Фазила Сафина, Йәрдәлиә Хисамова — һарыҡ ҡараусылар, Илия Даутова һыйыр һауыусы булып күп йылдарҙан бирле эшләйҙәр. Улар общественный малсылыҡты үҫтереүҙә, уның продуктивлеген күтәреүҙә ҙур тәжрибә туплағандар. Үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәре өсөн был иптәштәр йыл һайын хеҙмәт көндәренә натуралата өҫтәмә түләү алалар.

Күптән түгел генә ауыл Советының ауыл хужалығы даими комиссияһы Сталин исемендәге колхозда малдарҙы ҡышлатыуҙың торошон тикшерҙе. Был эштә булған сериоз етешһеҙлектәрҙе асты һәм тикшереү һөҙөмтәләре исполком ултырышында ҡаралды. Ултырышта ферма мөдире иптәш Х. Әхмәтшиндең информацияһы тыңланып, асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә йүнәлтелгән практик саралар билдәләнде. Комиссия билдәләнгән сараларҙың тормошҡа ашырылыуына нығылы контроллек итә. Фермаға яҙғы осорға бер айлыҡ мал аҙығы ташып ҡуйылды.

Хәҙер ауыл Советы, уның даими комиссияһы һәм шулай уҡ бөтә депутаттар яҙғы сәсеүҙе большевистик әҙерлек менән ҡаршылап, уны өлгөлө үткәреүгә бөтә колхозсыларҙың иғтибарын мобилизовать итәләр. Колхозсылар араһында социалистик ярыш ойошторалар, бригадаларҙың яҙғы сәсеү осорона төҙөлгән эш пландарын тикшерәләр.

Н. Ғәлиуллин,

Сәкмағош районы, Рәжәп ауыл Советы председателе.

Һуңғы почтанан

„Октябрь натисҡаһы" типографияһы пропагандисҡа нисек ярҙам итә

Беҙҙең алдыбыҙҙа «Пропагандисҡа ярҙамға» журналының 1-се номеры. Журналда барлығы ике генә материал урынлаштырылған, шулай ҙа уларҙы аҙағына тиклем уҡып сығып булмай. Сөнки ҡайта-ҡайта уҡырға кәрәк. 12-се биткә тиклем килһәң, унан тағы ла 5-се бит башлана... Тағы ла 12-се биткә барһаң 29-сы бит китә. Мәҡәләнең бәйләнешен юғалтып булһа ла уҡығандың һуңында 36-сы биттәге һөйләм бөтмәй, абзацта яңы һөйләм күрһәң, ҡараһаң тағы ла 29-сы битте уҡырға кәрәк.

Был брак Өфөләге «Октябрь натисҡаһы» типографияһында эшләнгән. Ай буйына китеп алған был кескәй генә журнал, үҙендәге бракты бөтөрә алмаһа, пропагандистарға бракҡа ҡаршы көрәшеүҙә ниндәй ярҙам итә ала ул, был бер. Икенсенән, «Октябрь натисҡаһы» типографияһының пропагандистары бракҡа ҡаршы көрәштә ниндәй агитация-пропаганда эштәре алып баралар икән?

Горькийса күрешеү

(Йәш яҙыусыларҙың Мәскәүҙәге кәңәшмәһенән ҡалған тәьҫирҙәр)

Яңы тәьҫирҙәр аҫтында яҙыуы еңел түгел. Бәлки был фекерҙә хәҡиҡәттең бер өлөшө барҙыр. Ә минең өсөн — йәш яҙыусыларҙың икенсе Бөтә Союз кәңәшмәһендә ҡатнашыусы өсөн — хәҙергә әле кәңәшмәнең йомғаҡтары тураһында ентекле итеп отчет биреүе ҡыйын. Сөнки өлкән йәштәрҙәге яҙыусылар тарафынан яһалған бик ҡыҙыҡлы докладтар тураһында тәрән фекер йөрөтөү өсөн, минең яҙған, иптәштәремдең китаптары тураһында әйтелгән тәнҡит һүҙҙәренә тәрән һығымталар яһау өсөн оҙаҡ ҡына ваҡыт кәрәк. 300-ҙән артыҡ яңы әҫәр һәр яҡлап, ентекләп тикшерелде бит... Минеңсә, был кәңәшмә унда ҡатнашыусыларҙың бөтәһе өсөн дә ысын Академия булды, тип әйтһәң дә хата булмаҫ. Ундарса йылдар үтерҙәр, ләкин ес йөҙҙән артыҡ йәш яҙыусынан береһе лә 78 йәшлек Михаил Михайлович Пришвиндең ысын йөрәгенән һөйләгән һүҙҙәрен һәм яҙыусының оҫталығы тураһында Константин Александрович Фединдең гүзәл докладын, Твардовскийҙың һәм Горбатовтың, Павленконың һәм Караваеваның, Сурковтың һәм Бабаевскийҙың, Погодиндең һәм Пановаҙың ялҡынлы телмәрҙәрен онотмаҫ...

Был кәңәшмә йәш яҙыусыларҙы тәнҡиткә тура ҡарарға өйрәтте, сөнки семинарҙарҙа тәнҡиттең йәш әҙәби көстәр яҙмышы менән ҡыҙыҡһыныуы хөкөм һөрҙө. «Әле формалашып етмәгән, камилләшмәгән талантҡа ҡиләсәктә Горькийса күрә белеү — яңы ғына яҙа башлаған йәш яҙыусыларҙың ижады менән танышыусыларҙан бына нәмә талап ителә», — тине Алексей Александрович Сурков кәңәшмәгә йомғаҡ яһап.

Йәшереп тораһы юҡ, бик күп яҡшы мәҡәләләр араһында ҡайһы бер ҙә шундай «тәнҡиттәрҙе» лә осратырға мөмкин, улар авторға уның теге, йәки был етешһеҙлеген бөтөрөүҙә ярҙам итеү теләге менән яҙылмайынса, йәш авторҙы хурлау, уның хеҙмәтенә тап төшөрөү теләге менән яҙылған булалар... Бындай булғанынса, ундай мәҡәләләр әҙәбиәттәге йәш кадрҙарға зарар ғына итәләр.

Семинар занятиеларында йәш яҙыусыларҙың айырым китаптары буйынса етешәр һәм унан да күберәк докладтар яһалды. Мәҫәлән, бер йәш яҙыусының әҫәре буйынса Сталин премияһы алған ес яҙыусы, ес тәнҡитсе, ике яҙыусы сығып һөйләне... Бында инде авторҙың йәшлегенә йәки тәжрибәһеҙлегенә һис бер төрлө ситерәү яһалманы, әҫәрҙәргә айырыуса юғары талаптар ҡуйылды.

— Мин шуны һиҙҙем, — тине К. Федин, — ҡағиҙә рәүешендә, еңел яҙған яҙыусылар түгел, ә бик ауырлыҡ менән яҙған яҙыусылар яҡшыраҡ уңыштарға өлгәшәләр. Минеңсә, быны сәбәбе шунда: яҙыусылыҡ эшенә хас булған ҡыйынлыҡтарҙы еңергә тырышыусыға, уҙ ҡыйынлыҡтарҙы уратып үтергә тырышыусыға ҡарағанда, әлбиттә ауырыраҡ була... Бына шуға күрә лә йәш яҙыусыдан тәүге аҙымдарынан уҡ унан һан хеҙмәтенә ҡарағанда, сифат хеҙмәтен күберәк талап итергә кәрәк.

Өлкән йәштәге яҙыусылар беҙҙең алға бик юғары талаптар ҡуйҙылар. Федор Васильевич Гладков былай тип яҙҙы:

«Яҙыусы өсөн иң мөһиме — көстә ҡыҙғанмайынса, рухты төшөрмәйенсә эшләүҙә, арымай-талмай уҡыуҙа, художество камиллегенә өлгәшеүҙә, үҙенән эшенән риза булып етмәү сифатын, үҙ-үҙенде тәнҡитләү, партия һәм халыҡ алдында яуаплылыҡ тойғоһон үҫтереүҙә».

Йәш яҙыусыларҙың икенсе Бөтә Союз кәңәшмәһендә Мәскәү яҙыусыларынан һәм Мәскәүҙәге партия, комсомол ойошмалары, матбуғат вәкилдәренән тыш, 300-ҙән артыҡ башҡа республикаларҙан килгән кеше ҡатнашты, шуларҙан 20-һе ҡатын-ҡыҙҙар ине. Делегаттар араһында партия члендары һәм кандидаттары 159 кеше, 44 комсомолец булды. Башҡортостандан кәңәшмәлә Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Ғабдулла Әхмәтшин, Анатолий Рыбин һәм мин булдыҡ.

«Йәш совет поэзияһы» һәм «Совет драматургияһы мәсьәләләре һәм йәш драматургтар ижады» тураһында А. Сурков һәм Н. Погодин доклад яһанылар.

ВЛКСМ Үҙәк Комитеты бинаһында проза, шиғыр, драматургия, тәнҡит, балалар әҙәбиәте, сатира һәм юмор буйынса секция занятиелары үтте. Назар Нәжми ижадын сериоз тикшергән семинарға шағир Сергей Смирнов етәкселек итте. Ғ. Әхмәтшин ижадын тикшереү эше А. Крон етәкселегендә барҙы. А. Рыбин әҫәре тикшерелгән семинарға П. Павленко етәкселек итте. «Үлемһеҙлеккә хоҡуҡ» тигән китап Б. Горбатов етәкселек иткән икенсе семинарҙа тикшерелде. Секцияларҙың эштәрендә совет әҙәбиәтендәге иң талантлы һәм алдынғы яҙыусылар ҡатнаштылар.

Йәш яҙыусыларҙың икенсе Бөтә Союз кәңәшмәһе ниндәйҙер яңы ҙур профессиональ тәжрибә менән уртаҡлашыу буйынса гүзәл стахановсылар йыйылышын хәтерләтә ине. Ҡарт яҙыусылар бөтәһен дә белергә теләүсе йәштәргә ысын күңелдән яҡшы теләк менән килгәйнеләр: улар нисәмә йылдар буйынса үҙҙәрендә йыйналған ижади эш тәжрибәһе менән уртаҡлаштылар.

Бына, «Правда» газетаһының Культура йортонда яҙыусылыҡ оҫталығы тураһында бер нисә тапҡыр ҡыҙыу дискуссиялар булды. Ораторҙарҙың ҡайһы берҙәре: яҙыусылыҡ мастерлегенең нигеҙе — тел, тинеләр, ҡайһы берҙәре — быны һүҙ оҫталығын, образдарҙы бирә белеүҙә һәм композиция төҙөү белеүҙә лә күрҙеләр, уны киңерәк итеп аңлаттылар.

— «Минеңсә, — тине А. Сурков, — яҙыусының тормошто белеүе, тормошта киләсәктең үҫентеләрен айыра белеү — һәм уйҙан ғына түгел, уларҙың тормоштағы конкретлегендә, «бөтә ауырлығы, тупаҫлығы, көрәшеп тороусанлығы» менән айыра белеү яҙыусының мастерлегенең тап, алдынғы элементы булып торорға тейеш».

К. Фединдең, А. Твардовскийҙың, Б. Горбатовтың, П. Павленконың, Г. Николаеваның, С. Бабаевскийҙың, М. Пришвиндең сығыштары айырыуса ҡыҙыҡлы булды.

Александр Твардовский — яҙыусы дөйөм эштең уңышы өсөн тәрән кисерештәр үткәрергә, уны актив яҡлаусы булырға, тормош материалының пропагандисе булырға тейеш, — бары тик шул ваҡытта ғына уның әҫәре алыҫтарға яңғырар, киң отклик һәм уҡыусыларҙа дөйөм мөхәббәт табыр, — тип ышандырырлыҡ итеп һөйләне.

— «Әгәр ҙә беҙгә берәр нимәне иҫбат итергә кәрәк икән, әгәр ҙә һеҙ үҙегеҙҙең мөхәббәтегеҙҙе аңлатырға тырышһығыҙ икән, йәки партбюроға аңлатма яҙаһығыҙ икән, һеҙ был ваҡиғала кәрәкле иң яҡшы һүҙҙәрҙе табаһығыҙ, сөнки һеҙ үҙегеҙҙең был һүҙҙәрҙе һөйләргә тейеш булыуығыҙға ныҡ ышанған булаһығыҙ», — тине ул.

Семен Бабаевский ҙә трибунала шундай уҡ фекерҙе әйтте:

— Яҡшы тормош тураһында яҙыу ғына етмәй, ул тормошто күрһәтергә кәрәк, уның ысынлап та яҡшы булыуын иҫбат итергә кәрәк. Быны эшләй алмаһың икән, һинең китабыңа ышанмаясаҡтар...

Ошо айҡанлы күп телмәрҙәр тормошто, бик күп «әҙәби» материалды өйрәнеүгә йүнәлтелде. Минеңсә, беҙҙең тарафтағы совет ысынбарлығын көн һайын, тәрән, ныҡышмалы һәм ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнеү тураһындағы идеяны Борис Горбатов барыһына ҡарағанда ла асығыраҡ дөйөмләне. Ул үҙенең профессиональ тәжрибәһе менән уртаҡлашып, йәштәргә ошондай кәңәштәр бирҙе:

— Кәңәшмәлә сығып һөйләүселәр бөтәһе лә яҙыусының эше өсөн тормош тәжрибәһенең ҙур әһәмиәтле урын тотоуы тураһында һөйләнеләр. Һәм был аңлашыла ла. Үҙе бер нәмә лә белмәгән кеше, кешеләргә ни ҙә һөйләһен. Минең шуны әйтәһем килә, тормош тәжрибәһе, тормошто белеү осраҡлы «ижади командировкалар» менән генә барлыҡҡа килмәй ул. Яҙыусының бөтә ғүмере көн һайын, өҙлекһеҙ күҙәтеүҙән һәм өйрәнеүҙән тора.

Яҙыусы, уйлап сығарыусы көйөк уҡ, асыштарҙа тыуа. Уға тиклем ижад ителгән нәмәләр — үтелгән этап ул, ул инде ары китергә, әҙәбиәткә яңыраҡ вклад индерергә тейеш. Үткәндәрҙе ҡабатлаусы — яҙыусы түгел, новатор түгел ул. Яҙыусы үҙе яҙған телде белмәһә яңы китаптар яҙыу тураһында фекер йөрөтөргә лә ярамай.

Вера Панова телде яҙыусының төҙөлөш материалы тип атаны: «насар материалдан яҡшы бина төҙөп булмай, — тине ул. — Беҙ Лев Николаевич Толстойҙың теле ни дәрәжәлә аныҡ һәм аңлайышлы булғанлығын беләбеҙ. Салтыков-Щедриндең һүҙҙәре лә емергес көскә эйә булғанлығын беләбеҙ. «Баҡыр һыбайлы» ла һәм «Үлек йәндәр»ҙә лә мәңгө ямаҫ таштай кеҫлә һүҙҙәр ята...» Иптәш Сталиндең әҙәби яҙмаһы — ошондай ҡабатланмаҫ ижади индивидуальностең иң бөйөк өлгөһө булып тора».

Йәш яҙыусыларҙың Мәскәүҙәге кәңәшмәһе тураһында алған ғәйәт оло тәьҫирҙе ҡыҫҡа ғына газета мәҡәләһендә тулыһынса әйтеп бөтөрөү мөмкин түгел, мин үҙ алдыма ундай бурыс ҡуйғаным да юҡ. Комсомолдың Үҙәк Комитетына һәм СССР Совет яҙыусылары союзына был кәңәшмәне ойоштороғандары өсөн рәхмәт һүҙҙәре әйтәһе килә. Ул кәңәшмә йәш яҙыусыларҙы тәрбиәләүҙә һис шикһеҙ ҙур хеҙмәт күрһәтер. Шағир Алексей Сурков тарафынан һуңғы пленар ултырышта әйтелгән һүҙҙәрҙе ҡабатлап әйтәһе килә:

— Бер-береңде байыҡтырыу процесы кәңәшмәнең бик яҡшы бер яғы булды. Ҙур тәжрибәләре булған ҙур яҙыусылар үҙҙәренең йәш иптәштәренә үҙҙәре белгәндең бөтәһен дә ысын күңелдәренән тапшырҙылар. Һәм шул уҡ ваҡытта улар йәштәр менән ошолай ижади яҡтан фекер алышыу нигеҙендә үҙҙәре лә байыҡтылар һәм үҫтеләр. Йәш яҙыусылар был эштә бик яҡшы сифаттарын, бөтәһенән элек үҙ әҫәрҙәре тураһындағы тәнҡитте тыңлай белеүҙәрен күрһәттеләр. Был, йәш яҙыусыларҙың идея һәм рухи яҡтан үҫкәнлектәрен, улар өсөн большевистик үҙ-үҙеңде тотоу стиле йәшәүҙең бер нормаһына әйләнгәнлеген күрһәтте.

Әнүәр Бикчәнтәев.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Ужымдарҙы яҙ тәрбиәләү

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа яҙғы сәсеүгә әҙерлек барышы тураһында СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡарарында: **«Ужым культураһы сәсеүлектәрен, күк һағыҙын ике йыллыҡ һәм көҙгә сәсеүлектәрен тәрбиәләү буйынса сараларҙы үҙ ваҡытында әҙерләүҙе һәм үткәреүҙе ойошторорға, ужым ашлыҡтары сәсеүлектәрен урындағы һәм минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы киң күләмдә үткәреүҙе тәьмин итергә, шулай уҡ уларҙы яҙғы осорҙа үҙ ваҡытында тырматыуҙы ойошторорға»**, тип әйтелә.

Юғары урожай алыуға ирешкән алдынғылар, комплекс агротехника сараларын тормошҡа ашырыу менән бер рәттән, ужымдарҙы аҙыҡландырыуға ныҡ иғтибар бирәләр. Ғафури районы Жданов исемендәге колхозда ужымдар үткән яҙ, һәр гектарға 5-әр тонна иҫәбенән, тиреҫ шыйыҡсаһы менән өҫтәмә аҙыҡландырылды һәм тырматылды. Һөҙөмтәлә 18 гектар арыштың һәр гектарынан 22-шәр центнер урожай алынды.

Өфө районы Цурюпа исемендәге совхоздың юғары урожай алыу мастеры иптәш Васильев 152 гектар арыш ужымын, һәр гектарға 8-әр тонна сереген тиреҫ һәм берәр центнер көл индереү иҫәбенән, өҫтәмә аҙыҡландырҙы һәм бер әҙҙән тырматты. Бында һәр бер гектарҙан 22,2-шәр центнер арыш урожайы алынды.

Быйыл яҙ ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу, тырматыу бөтә колхоздарҙа һәм совхоздарҙа киң күләмдә үткәрелергә тейеш. Билдәле булыуынса, ужым яҡшы ҡышлаған баҫыуҙарҙа ла, бер гектарҙан уртаса 13—14 центнер арыш урожайы алыу өсөн, арыш үҫемлеге үҙенең үҫеү осоронда бер гектар ерҙән: 34,5 килограмм азот, 20,6 килограмм фосфор, 39 килограмм калий һәм 10 килограмм самаһы әҙбиз матдәләре ала. Әгәр ҙә был матдәләр тупраҡта өҫтәлә барылмаһа, иген урожайының түбән булыуы мөмкин.

Ужымдарҙы аҙыҡландырыу һәм тырматыу буйынса төҙөлгән планды тулыһынса тормошҡа ашырыу өсөн беҙҙә быйыл бөтә мөмкинлектәр бар. Тик булған мөмкинлектәрҙән ваҡытында, дөрөҫ һәм тулыһынса файҙаланырға кәрәк.

Ужымдарҙы яҙ көнө беренсе тапҡыр аҙыҡландырыу мөмкин тиклем иртә, ҡар иреп бөтөү менән, туң ер өҫтөндә үткәрелә. Ужымдарҙы иртә аҙыҡландырыу, тупраҡҡа индерелгән ашламаларҙын тиҙ ваҡыт эсендә иреп һәм таралып, үҫемлектәргә үҙләштерерлек хәлгә килеүҙәрен тәьмин итә.

Аҙыҡландырыу өсөн урындағы ашламаларҙан бигерәк тә тиреҫ шыйыҡсаһы иң яҡшы, азотлы, көслө ашлама булып тора. Шулай уҡ ҡош тиҙәге, сереген тиреҫ һәм фекали ҙә үҫемлектәргә ҙур йоғонто яһай. Был ашламалар бөтә колхоздарҙа һәм совхоздарҙа етерлек күләмдәрҙә әҙерләнергә тейеш.

[illegible]

Совет агрономия фәне, юғары урожай мастерҙарының бай тәжрибәләре таныш, тиреҫ шыйыҡсаһы йәки сереген тиреҫкә суперфосфат менән ҡатнаштырып [illegible]

файҙалы була. Һәр гектарға 80 — 100 килограмм суперфосфат гранулын индереү, ул һәр гектарға 2,5 — 3 центнер өҫтәмә урожай бирә ала. Суперфосфат гранулын индергәндә ашламалағы фосфор матдәһе тупраҡҡа таралып бөтмәй, бәлки үҫемлектәрҙең тамырҙарын аҙыҡландырыуға китә. Академик Т. Д. Лысенко гранулы ашламаларҙың әһәмиәте тураһында: **«Органик матдәләр ҡушылған гранулы завод суперфосфаты, шулай уҡ хужалыҡта сереген тиреҫ менән гранулаштырылған суперфосфат шундай яҡшы эффект бирә, хәҙер был ашламаны бертөрлө ашлыҡтарҙың, бигерәк тә ужым ашлыҡтарының күп миллионлаған гектарына ҡулланырға ваҡыт етте»**, тип күрһәтә.

Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн гранулы ашлама түбәндәгесә әҙерләнә. Бик ныҡ ваҡланған өс өлөш суперфосфатҡа 7 өлөш сереген тиреҫ ҡушыла. Тәжрибәләр күрһәткәнсә, орлоҡто ҡоро ағыулағандағы кеүек, әйләнмәле мискәгә ашламалар ҡатнашмаһын һалып әйләндергеләү юлы менән гранулды тиҙ һәм еңел әҙерләргә була. Тупраҡҡа индереү өсөн гранул төйөрҙәренең ҙурлығы 2 — 3 кубик миллиметр булыуы шарт. Ошо рәүешсә әҙерләнгән гранулы ашлама гектарына 3 — 4 центнер иҫәбенән индерелә. Башҡа төр минераль ашламаларҙан: аммиак селитраһы гектарына 70 — 100 килограмм, аммоний сульфаты 100 — 150 килограмм, гранулаштырылмаған суперфосфат гектарына 1,5 — 2 центнер, көл ашламаһын 2—3 центнер индерергә була. Был минераль ашламалар ҡоро урында тотола һәм яҡшы итеп әҙерләнә. Ҙур киҫәкле булғандарын ваҡлап һәм тупраҡҡа мөмкин тиклем тигеҙ итеп һибергә кәрәк.

Ҡош тиҙәген көлһыу тупраҡлы ерҙәргә гектарына 6 — 7 центнер, еүеш килеш 10 — 12 центнер, ҡара тупраҡлы ерҙәргә ҡоро килеш 5 центнер, еүеш килеш 8 центнер индерергә мөмкин. Билдәле, ҡайһы бер сәбәптәр менән ашламаның сифаты түбәнәйгән булһа, ул саҡта норманы арттырырға кәрәк.

Тиреҫ шыйыҡсаһының бер өлөшөнә 2 — 3 өлөш һыу ҡатнаштырыла. Был рәүешсә эшләүҙе тупраҡҡа тигеҙ һибеү һәм үҫемлектәрҙе көйҙәреүҙән һаҡлау өсөн файҙаһы була. Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырылған ерҙәр арҡырыға бер әҙҙән тырмалана һәм шуның менән ашламалар тиҙ ваҡыт эсендә тупраҡҡа күмдерелә.

Бөтә ужым сәсеүлектәрендә, шулай уҡ өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелмәгән майҙандарҙа ла, яҙ иртә тырматыу сараһын үткәрергә кәрәк. Сөнки тырмалау арҡаһында ужым ашлыҡтарының һарғайған япраҡтары, ҡый үләндәре бөтә. Шулай уҡ тырмалау ерҙең өҫтөн йомшарта, тупраҡта дым һаҡлауға ярҙам итә. Ужым үҫемлегенең тамырына һауаның үтеүен еңеләйтә, тупраҡ өҫтөндәге ҡаты ҡатлау [illegible]

[illegible]

Агроном Ә. Әхтәмов.

КӨЙӨРГӘҘЕ РАЙОНЫНДА

Мәғариф эштәре яҡшыра

Районда Октябрь революцияһына тиклем бер генә башланғыс мәктәп булған. Хәҙер бында 4 урта мәктәп, бер [illegible] 23 ете йыллыҡ һәм 90 башланғыс мәктәп бар. [illegible] 1950 йылда [illegible] 350-нән артыҡ уҡытыусы эшләй.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосаларының майҙаны киңәйтелә

Бынан дүрт йыл элек районның колхоздарында баҫыу һаҡлаусы урман полосалары 30 гектар ғына иҫәпләнә ине. 1950 йылда уҙ 425 гектарға еткерелде. 1951 йылда баҫыу һаҡлаусы урман полосаларының дөйөм майҙаны 600 гектарға еткерелә. [illegible]

Колхоз тотош радиолаштырыла

Ленин исемендәге [illegible] колхозда яҙғы сәсеүгә [illegible] юнәлтелгән политик-массовый эш киң йәйелдерелә. [illegible] Хәҙер район ауылдарында [illegible] 300-ҙән артыҡ [illegible]

Библиотекала китап фонды арта

Район библиотекаһының китап фонды йылдан-йыл арта. [illegible] 9 мең [illegible] А. С. Пушкин әҫәрҙәре, М. Ғафури, Павленко [illegible] художество әҙәбиәте бар.

Яҙ килде. Республикабыҙҙың башҡалаһы — Өфөлә 1 Май байрамына әҙерлек эштәре башланды. Хеҙмәтсәндәребеҙ урамдарҙы таҙарталар, ағас баштарын ҡырҡалар, магазиндарҙың витриналарын матурлайҙар һәм биналарҙы буяйҙар.

Һүрәттә: йәшелләндереү тресы эшсеһе иптәш Ф. Стукалов Ленин урамындағы ағастарҙың башын ҡырҡа.

М. Әхмәтъянов фотоһы.

Яңы автомат һурҙырғыс

Нефтте мерниктән автомат менән һурҙырып, уны тейешле урынға коллектор буйынса ағыҙыу операторҙар хеҙмәтен байтаҡҡа еңеләйтә.

Бынға тиклем күп кенә промыслаларҙа автомат һурҙырғыстар ҡулланылды. Ләкин улар тулы эффект бирә алманылар. Сөнки насос нефтте ҡайһы ваҡытта һурмай башлай. Механизмдә авария була ҡалһа, бының тураһында ул культбудкаға сигнал бирмәй ине. Шуға күрә был агрегатты хеҙмәтләндереүсе оператор уның эшен һәр ваҡыт күҙәтеп торорға тейеш булды.

Һуңғы ваҡытта беренсе номерҙе промыслала иип тәҡдим иткән автомат һурҙырғыс һыналды һәм эксплуатацияға тапшырылды. Ул төҙөлөшө яғынан бик ябай һәм ышаныслы. Элекке автомат һурҙырғыстарҙа булған етешһеҙлектәр бөтөрөлдөләр.

Уның эш принцибе лә шулай уҡ ябай булып, ул түбәндәгеләрҙән тора. Мерник эсендәге ҡалҡыуыс рычаг менән тоташтырылған. Эске рычаг люк аша үткәрелгән валик ярҙамында тышҡы рычаг менән ҡушылған. Тышҡы рычагҡа тимер сыбыҡ ҡуйылып, ул махсус кнопкаға беркетелә.

Мерниктәге нефть кимәле күтәрелеү менән ҡалҡыуыс та күтәрелә. Тимәк, тимер сыбыҡ бушай һәм, билдәле урынға еткәс, кнопканы бушата. Шул арҡала насостың электр двигателе эшләй башлай. Мерниктәге нефть төшөү менән ҡалҡыуыс та төшә. Был тимер сыбыҡ тартыла һәм электр двигателен эштән туҡтата тигән һүҙ.

Әгәр ҙә электр двигателе эшләмәй, йәки насос нефттәрҙе һурмай икән, был саҡта кнопка махсус контакттар менән ҡушыла һәм культбудкалағы сирена сигнал бирә башлай.

И. Герман,

«Туймазынефть» тресы 1-се номерле промыслаһының электр механигы.

Агрозоотехник курстарҙа уҡыу йылын уңышлы тамамлау өсөн

Ғафури районы колхоздарында уҙған йылдың көҙөндә 19 урында өс йыллыҡ агрозоотехник курстар ойошторолдо. Курстар менән етәкселек итеүгә иң яҡшы специалистар йәлеп ителде.

Агрозоотехник курстарҙы алып барыуға серьез иғтибар биреп, беркетелгән иптәштәрҙең күбеһе үҙ вазифаларын ҙур тырышлыҡ менән үтәйҙәр. Мәҫәлән, район ауыл хужалығының бүлеге агрономдары Сибряева, Зазулин, Горина, баш зоотехник Хисмәтуллин иптәштәр занятиеларға ентекле әҙерләнеп киләләр һәм яҡшы үткәрәләр. Уларҙың лекцияларына тыңлаусылар ҙур теләк менән йөрөйҙәр.

Ләкин ҡайһы бер специалистар быға икенсе дәрәжәләге эш итеп ҡарайҙар. Мәҫәлән, агроном Усова, Шипанов һәм Соколов иптәштәр курстар ойошторолғандан бирле бер занятие лә үткәрмәгәндәр. Зоотехник Кочеткова лекцияларға әҙерләнеп килмәй. Ул занятиеларҙа китаптарҙа йәки газеталарҙа баҫылған материалдарҙы ғына уҡып үткәрә.

Курстар менән етәкселек итеүсе иптәштәрҙең төп етешһеҙлеге шунда: улар үҙҙәренең лекцияларын колхозда үткәрелгән агротехник саралар менән бәйләп алып бармайҙар, практик занятиелар үткәрмәйҙәр.

А. Хәлиуллин.

Италия коммунистәр партияһының VII съезы асылды

РИМ, 3 апрель. (ТАСС). Бөгөн Римда Италия коммунистәр партияһының VII съезы асылды. Съезда 750 делегат, шулай уҡ күп һанда ҡунаҡтар — Рим общественносеның вәкилдәре, культура деятелдәре, демократик ойошмаларҙың етәкселәре ҡатнаша. Съезда ҡатнашыусылар башында Пальмиро Тольятти торған Италия компартияһы етәкселәренең президиумда күренеүҙәрен бик йылы ҡаршыланылар.

Компартия генеральный секретарының урынбаҫары Пьетро Секкья съезды асыҡ тип иғлан итә. Секкья үҙенең ҡыҫҡаса инеш телмәрендә компартияның утыҙ йыл йәшәү дәүерендә үткән тарихи юлына туҡтала. Уның бөтә донъя хеҙмәтсәндәре юлбашсыһы, тыныслыҡ байраҡсыһы иптәш И. В. Сталинға иҫәнлек теләүе съезда ҡатнашыусылар тарафынан көслө ҡул сабыуҙар менән ҡаршыланды. Делегаттар һәм ҡунаҡтар үҙҙәренең урындарынан торалар һәм иптәш И. В. Сталин хөрмәтенә бик оҙаҡ ҡул сабыуҙар дауам итә һәм ул овацияға күсә. «Йәшәһен Сталин!», «Йәшәһен большевиктәр партияһы!», «Йәшәһен Советтар Союзы!» тигән тауыштар яңғырай.

Съезда ҡатнашыусылар шулай уҡ Америка империалистәренең агрессияһына ҡаршы көрәш алып барыусы Корея һәм Ҡытай халыҡтарын, донъялағы бөтә туғандаш коммунистик һәм эшселәр партияларын ҡайнар ҡотланылар.

Съезда ҡатнашыусыларҙың ҡул сабыуҙары аҫтында съездың президиумы һайлана. Съезға сит илдәрҙән килгән коммунистик һәм эшселәр партияларының вәкилдәре — башында Андре Марти торған француз компартияһының, партия Үҙәк Комитеты секретары Иштван Ковач етәкселегендә Венгрия хеҙмәтсәндәр партияһының, партияның генеральный секретары Видали етәкселегендә Триестең азат территорияһы компартияһы, Швейцария хеҙмәт партияһы вәкилдәре сәхнәлә президиум өҫтәле тирәһенән урын алалар.

Халыҡ демократияһы илдәренең коммунистик һәм эшселәр партиялары вәкилдәренә, Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһы вәкилдәренән башҡаларына Италия хөкүмәте Италияға инергә рөхсәт биреүҙән баш тартты.

Компартияның Рим федерацияһы секретары Натоли Римдәге һәм Рим провинцияһындағы 100 мең коммунист һәм баш ҡалалағы бөтә демократик халыҡ исеменән съезда ҡатнашыусыларҙы ҡотланы. Социалистик партияның генеральный секретары урынбаҫары Родольфо Моранди Италия коммунистәренә Италиялағы 700 мең социалист исеменән ҡайнар сәләм тапшырҙы. Моранди, Италия хеҙмәтсәндәренең был ике партияһына ҡаршы реакция тарафынан уйлап сығарылған ниәттәрҙең бөтәһе лә кәсһеҙ, был партияларҙың союзы тыныслыҡ һәм Италияның прогресе өсөн көрәштең терәге булып торған берҙәм хәрәкәт тураһындағы ҡаҡшамаҫ пакт менән нығытылды, тип белдерҙе.

Съезда председателлек итеүсе Болонье ҡалаһының мэре Джузеппе Доцца, съезд исеменә Советтар Союзы Коммунистәр Партияһы Үҙәк Комитетынан ҡотлау алынғанлығын хәбәр итте.

Ҡотлауҙа былай тип әйтелә:

«Италия коммунистәр партияһының етенсе съезына.

Советтар Союзы Коммунистәр Партияһының Үҙәк Комитеты Италия эшселәр синыфының һәм бөтә хеҙмәтсәндәренең алдынғы отряды булған Италия коммунистәр партияһының VII съезына туғандарса сәләм ебәрә һәм Италия компартияһының артабанғы эштәрендә уңыштар теләй.

Советтар Союзының Коммунистәр Партияһы Үҙәк Комитеты».

Съезда ҡатнашыусылар бөтәһе лә урындарынан торалар һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты хөрмәтенә көслө алҡышлайҙар.

Председателлек итеүсе съездың көн тәртибен иғлан иткәндән һуң, көн тәртибендәге беренсе пункт буйынса «Тыныслыҡ өсөн, хеҙмәт һәм азатлыҡ өсөн Италия халҡының көрәше» тураһында доклад яһау өсөн компартияның генеральный секретары Пальмиро Тольяттиға һүҙ бирә.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 3 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Бөгөн дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары кәңәшмәһенең 22-се ултырышы булды. Великобритания вәкиле Дэвис председателлек итте. СССР вәкиле Громыко, кисәге ултырышта өс держава делегацияһы тарафынан индерелгән яңы тәҡдим тураһында элек яһаған замечаниеләремә өҫтәп әйтер һүҙем юҡ, тине.

Дэвис ултырышты 4 апрелгә кисектерергә тәҡдим итте.

Громыко был тәҡдимгә ҡаршы сығыш яһаны һәм кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың иғтибарын шуға юнәлтте: әлегә ентекләп тикшерелмәгән күп кенә совет тәҡдимдәре бар. Айырым алғанда, Атлантик пакт тураһындағы һәм Американың Англияла, Норвегияла, Исландияла һәм Европа менән Яҡын Көнсығыштың башҡа илдәрендә хәрби базалар төҙөүе тураһындағы мәсьәләләрҙе министрҙар ҡарамағына ҡуйыу хаҡындағы тәҡдим шуларға ҡайтып ҡала. Кисәге ултырышта, — тине Громыко, — Джессеп был мәсьәләгә бары тик өҫтән генә ҡағылып үтте, ә Пароди менән Дэвис был совет тәҡдиме тураһында үҙҙәренең фекерҙәрен әйтмәнеләр. Италия менән яраштырыу договорының Триескә ҡағылған өлөшөн үтәү тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индереү хаҡында СССР делегацияһы тарафынан индерелгән тәҡдим дә шулай уҡ бер фекергә киленмәгән башҡа мәсьәләләр иҫәбенә ҡайтып ҡала. Килешелмәгән ул мәсьәләләрҙе тикшереүҙе кәңәшмәнең ахрына ҡалдырыу маҡсатҡа ярашлы булмаҫ ине.

АҠШ вәкиле Джессеп, көнбайыш держава делегациялары тарафынан кисәге ултырышта индерелгән тәҡдим АҠШ, Великобритания һәм Франция делегациялары уйлағанса, көн тәртибенең бөтә проектын үҙ эсенә ала, тип белдерҙе. Уның фекеренсә, көн тәртибенә нимдәй ҙә булһа башҡа мәсьәләләрҙе индерергә ярамай.

Өс держава вәкилдәренең, беҙҙең кисәге тәҡдимебеҙ «көн тәртибенә тулыһынса яуап бирергә тейеш» тигән кисәге белдереүенә яуап биреп, Громыко былай тине:

— Триест проблемаһы Министрҙар Советы сессияһында тикшерелергә лайыҡлы, етерлек дәрәжәлә мөһим һәм киҫкен проблема булып тора. Был проблеманың Европалағы хәлдәргә һәм өс держава тәҡдименең беренсе һөйләмендә әйтелгән халыҡ-ара хәлдең киҫергәнешле булыуына тура-нан-тура мөнәсәбәте бар. Дөрөҫ, бынан бер-ике йыл элек бәлки Триест тураһында, хәҙергегә ҡарағанда, күберәк һөйләгәндәрҙер, сөнки Триескә губернатор билдәләү тураһындағы мәсьәлә айҡаны, ул, айырым алғанда, Именселек Советында тикшерелде. Хәҙер Триест тураһында аҙыраҡ һөйләйҙәр, ләкин унда эштәр элеккенән ҡәм түгел. Элеккесә Триестә Америка һәм Англия ғәскәрҙәре йәшәй, уны элеккесә, Англия-Американың хәрби, хәрби-диңгеҙ һәм хәрби-һауа базаһы итеп нығыталар.

Триест тураһындағы мәсьәләнең киҫкенлеге лә, әһәмиәте лә кәмемәгән, тине Громыко. Киреһенсә, тап шуға күрә лә, инде бер нисә йылдарҙан бирле һис бер законһыҙ рәүештә Триестә Англия-Америка ғәскәрҙәре тотолғанға күрә лә, Триестәге хәл тураһындағы мәсьәлә дүрт держава министрҙәре Советында ҡаралырға тейеш.

Унан һуң сығыш яһаған Франция вәкиле Пароди кәңәшмә делегацияларға кәңәшмәнең барышында үҙ тәҡдимдәрен индерергә ҡамасаулаусы процедура ҡабул итмәне, тине. Ләкин ул көн тәртибенә Триест тураһындағы һәм Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләләрҙе индереүгә ҡаршы килеүендә дауам итте.

Ләкин Пароди үҙ позицияһын нығытыу өсөн күпме лә булһа ышаныслыҡ бер дәлил килтермәне. Ул был юлы ла, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһында совет делегацияһы тарафынан индерелгән тәҡдим «пропаганда маҡсатын күҙҙә тота» тип белдереп, үҙенең иҫкергән ысулына тотондо.

СССР вәкиле Пароди̇ҙең был белдереүен мәғәнәһеҙ тип күрһәтте. Ғәҙәттә шулай була, тине Громыко, өс держава вәкилдәре совет делегацияһының теге йәки был тәҡдименә ҡаршы әйтерлек һүҙ тапмаһалар, СССР делегацияһы, йәнәһе, «пропаганда» менән шөғөлләнергә теләй, тип белдерәләр.

Аҙаҡтан Громыко Совет делегацияһы өс держава делегацияһының 2 апрелдәге ултырышта индергән яңы тәҡдимдәренең беренсе пункты тураһында өҫтәмә рәүештә һөйләү хоҡуҡын үҙендә ҡалдыра, тине.

Председателлек итеүсе Дэвистең тәҡдиме буйынса ултырыш ябылды.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 4 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 4 апрелдә оперативҙы хәбәр итте: Халыҡ армияһы частәре Ҡытай добровольцтәре менән берлектә бөтә фронттарҙа ла дошманға ҡаршы, уның йәнлә көсөнә һәм техникаһына ауыр юғалтыуҙар килтереп, көслө һуғыштар алып баралар.

4 апрелдә көнбайыш фронтта Халыҡ армияһы частәре дошмандың 12 самолетын атып төшөрҙөләр, 3 танкыһын юҡҡа сығарҙылар һәм 4 кораблен һыуға батырҙылар.

ТЫНЫСЛЫҠ ПА[КТЫ] ӨСӨН!

БОЛГАРИЯ

15 апрелдә бөтә Болгарияла [illegible] держава араһында Тыныслыҡ [illegible] төҙөү тураһында Тыныслыҡтың [illegible] Советы мөрәжәғәтенә ҡул[illegible] башлана. Матбуғат һәм радио [illegible] политик ваҡиғаға ҙур иғтибар [illegible]

«Ватан фронты» газетаһы [illegible] мәҡәләһендә былай тип яҙа: [illegible] Пакты тураһындағы мөрәжәғәт[illegible] йыйыу тыуған илебеҙҙең [illegible] һәм патриотикаһы өсөн намыҫ [illegible] лып ҡына ҡалмай, бәлки Болг[illegible] ныслыҡ өсөн көрәшеүселәрҙе[illegible] дә туранан-тура бурысы бул[illegible]

ФРАНЦИЯ

Ним ҡалаһында ГАР, ЭРО, [illegible] һәм Воклюз департаменттәре[illegible] лыҡ өсөн көрәш хәрәкәте ойо[illegible] килдәренең йыйылышы булып [illegible] йылыш яңы һуғышҡа әҙерлән[illegible] телгән бөтә сараларҙы, проект[illegible] пландарҙы фаш итергә, бер[illegible] ярҙамында ул сараларҙың бөт[illegible] ҡа сығарыуға, урындағы шарт[illegible] кә алып, халыҡтың бөтә социал[illegible] дарын көрәшкә ылыҡтырырға, [illegible] Германияны ҡоралландырыу[illegible] протест бюллетененә ҡултамға[illegible] кампанияһын көсәйтергә, шулай [illegible] бөйөк держава араһында Т[illegible] Пакты төҙөү тураһында Тын[illegible] Бөтә Донъя Советының беренсе [illegible] ҡарарҙарын тормошҡа ашыры[illegible] итергә саҡырып, халыҡҡа мөрәжә[illegible] ҡабул итте.

АВСТРИЯ

Линцелә (Америка оккупация[illegible] да) *тыныслыҡты яҡлауға арн[illegible] Австрия конгресы булып* үтте. [illegible] эшендә 250-нән артыҡ делегат [illegible] ты. Улар Юғары Австрия халҡының [illegible] лә ҡатламдарынан вәкил булы[illegible] дәр. Конгреста ҡатнашыусылар [illegible] резолюциялар ҡабул иттеләр. [illegible] рым алғанда, Австрия [illegible] Австрияла һуғыш пропаганда[illegible] тыуҙы һәм тыныслыҡты яҡла[illegible] ғарыуҙы талап иттеләр.

Книттельфельдтә лә (Англия [illegible] зонаһы) шулай уҡ тыныслыҡты [illegible] арналған массовый митинг булды. [illegible] гелә ҡатнашыусылар дүрт [illegible] ил эштәре министрҙәре урын[illegible] ның әҙерлек кәңәшмәһенә адре[illegible] леграмма текстын бер тауыштан [illegible] лар.

«Беҙ, — тип әйтелә телеграмма[illegible] тыныслыҡты яҡлау интерестәр[illegible] байыш Германияны ҡайтадан [illegible] заштырыуға ҡаршы, биш бөйөк [illegible] араһында тыныслыҡ пакты тө[illegible] лап сығыш яһарға саҡырабыҙ». [illegible]

Хайфонг районында Вьетнам Халыҡ армияһы[ның] уңышлы һөжүме

ШАНХАЙ, 4 апрель. (ТАСС). [illegible] информацион агентствоһы Донг-Т[illegible] мер бассейнендә халыҡ йәшәй[illegible] ҙур пункт булған Уонг-Би ҡала[illegible] нам Халыҡ армияһының алыуы[illegible] лә яҙып, оһоларҙы күрһәтә: Халыҡ [illegible] һы Хайфонг районында уңышлы [illegible] йәйелдереп, 27 мартҡа ҡарш[illegible] Уонг-Би̇зә көнбайышҡа табыныр[illegible] манлып күп кенә нығытмаларҙы [illegible] сығарҙы һәм 28 мартта ҡалаға [illegible] де. 1000 самаһы кешенән тора[illegible] пуз гарнизоны ҡоралдарын, һуғыш [illegible] пастарын, йөк машиналарын һәм [illegible] түлек запастарын ташлап ҡире [illegible]

Уонг-Би халҡы Халыҡ армияһы [illegible] тарын ҙур шатлыҡтар менән ҡаршы[illegible]

Унан ары агентство былай тип [illegible] тә: Уонг-Би Төньяҡ Вьетнамда [illegible] йы күмер бассейне ҡалалары [illegible] ҙурлығы менән икенсе урынды [illegible] ған ҡала, ҙур сауҙа һәм промыш[illegible] үҙәге, диңгеҙ флоты. Унда [illegible] килеп ҡушыла, бөтәһе 100 мең[illegible] кеше йәшәй.

Уонг-Би ҡалаһын алып, Халыҡ [illegible] мөһим ҡалаға эйә булып ҡына [illegible] бәлки, шулай уҡ француз колони[illegible] кәрҙәренең Хайфонг-Ханойск [illegible] ҡаплап тороусы һәм дәгә етешт[illegible] ондарҙың оборона системаһын [illegible]

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФ[illegible]

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА һәм КИНО[illegible]

Башҡорт Государство опера һәм [illegible] театрында — «ТРАВИАТА».
Рус драма театрында — «ЮҠ ЙӨ[illegible] КҮП ТАУЫШ».
«Октябрҙә» — «ШТРАФ МАЙҘ[illegible]
«Салауатта» — «ЯЛАНДА».
Матросов исемендәге кинотеа[illegible] «ЧАПАЕВ», «ПОМАРТ ЙӘЙ».

Өфө ҡалаһы Красноармейская [illegible] ның 1-се номерле йортондағы [illegible] тирала йәшәүсе Боков Алексей [illegible] вич Өфө ҡалаһы Ғафури урамы[illegible] номерле йортонда йәшәүсе Пал[illegible] лентина Васильевна менән айыр[illegible] тураһында эш ҡуҙғата. Эш Өфө[illegible] Жданов районының 2-се участ[illegible] судында ҡаралаҫаҡ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленно[illegible] бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01923 Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тиражы 25[illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл № 68 (8785) 7 апрель шәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

РЕСПУБЛИКАБЫҘ ХЕҘМӘТСӘНДӘРЕ БЕРЕНСЕ МАЙ БАЙРАМЫН ПРОИЗВОДСТВОЛА ЯҢЫ ЕҢЕҮҘӘР МЕНӘН ҠАРШЫЛАУ ӨСӨН КӨРӘШӘЛӘР. Л. Слуцкий. — Стрелочниктәр социалистик ярышҡа ҡушылдылар (1-се бит). И. Моисеев. — Хеҙмәт вахтаһында (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Б. Морзагилнев. — Эске резервтарҙы тулы файҙаланырға (2-се бит). Х. Сафин. — Делегаттар райкомдың эш стилен тәнҡитләнеләр (2-се бит).

ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ. Ә. Харисов. — Шағирҙың йырҙары (2-се бит).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. И. Өлнәтдинов. — Финанс планын ваҡытында үтәү өсөн (3-сө бит). С. Норбанғолов. — Хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын һәм ғаризаларын ҡарауға күберәк иғтибар итергә (3-сө бит). И. Кудаяров. — Баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының хеҙмәттәшлеген нығытырға (3-сө бит).

ПРОИЗВОДСТВО НОВАТОРҘАРЫ КӨНДӘЛЕГЕНӘН. М. Голяков. — Бораулау техникаһын дөрөҫ файҙаланайыҡ (3-сө бит). М. Фатхуллин. — Беҙҙең илдә ун [illegible] тарыбыҙ (4-се бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. һ. Юлдыбаев. — Ужарға ҡарты [illegible] көрөп ҡарау (4-се бит). А. Әхмәров. — Ауыл хужалығы алдынғыларының эш алымдарын бөтә колхоздарға еткерейек! (4-се бит).

Дүрт державы сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Партия ойошмалары секретарҙәренә күберәк ярҙам күрһәтергә

Большевиктәр партияһының тормошонда тәүге ойошмаларҙың роле ғәйәт тә ҙур. ВКП(б) Уставы менән билдәләнгәнсә, партияның тәүге ойошмалары беҙҙең партиябыҙҙың нигеҙе булып торалар. Улар хеҙмәтсәндәрҙең киң массаларын етәксе партия органдары менән бәйләйҙәр. Коммунистәр ошо тәүге ойошмаларҙа политик тәрбиә һәм коммунизм төҙөүҙең практик эштәрендә большевистик сыныҡтырыу алалар.

Партияның тәүге ойошмалары хеҙмәтсәндәр араһында даими агитацион-массовый эш алып барырға, уларҙы хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө бурыстарын үтәү өсөн көрәшкә мобилизовать итергә саҡырылғандар. Промышленность предприятиеләре, совхоз, МТС һәм колхоз эшендә бөтә яңылыҡты, прогрессивлекте яҡлау, уны производствоға индереү өсөн көрәш, хужаһыҙлыҡҡа һәм исрафлыҡҡа ҡаршы көрәш — тәүге партия ойошмаларының мөһим бурысы ул. Партияның тәүге ойошмалары хеҙмәтсәндәрҙең киң ҡатламына большевиктәр партияһының политикаһын актив үткәреүсе булып сығыш яһайҙар. Улар хеҙмәтсәндәрҙең культура һәм көнкүреш шарттарын артабан яҡшыртыу тураһында даими хәстәрлек күрәләр.

Партияның етәксе органдары тарафынан алға ҡуйылған ошондай мөһим бурыстарҙы уңышлы хәл итеүсе партия ойошмалары инде беҙҙә аҙ түгел. Черниковск фанера комбинатының партия ойошмаһы (секретаре иптәш Мөхәмәтьянов) үҙенең эшен коммунистәрҙә һәм бөтә эшселәр, инженер-техник работниктәр коллективында производство планын үтәү өсөн яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләүгә йүнәлткән. Партия ойошмаһы коллективта инженер Ковалев методы буйынса производство алдынғыларының, стахановсыларҙың эш алымдарын ҡулланып, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн көрәшкә мобилизовать иткән. Бөтә агитацион-массовый эш социалистик ярышты киң йәйелдереүгә, эшселәрҙә, инженер-техник работниктәрҙә комбинаттың эше һәм намыҫы өсөн яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Производство һәм социалистик ярыш мәсьәләләре, администрацияның хужалыҡ эшмәкәрлегенә контролдек, эшселәргә культура һәм көнкүреш шарттары тыуҙырыу мәсьәләләре партия ойошмаһының бюро ултырыштарында, йыйылыштарында планлы ҡарала. Ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшереү һәм тормошҡа ашырылыуын тәьмин итеү партия ойошмаһының иғтибар үҙәгендә тора. Партия ойошмаһының маҡсатҡа йүнәлешле эше комбинаттың I квартал планын срогынан алда үтәүгә килтерҙе.

Колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яҡтан нығытыу, социалистик ауыл хужалығының яңы, ҡеүәтле күтәрелешенә өлгәшеү өсөн колхоз партия ойошмалары актив көрәшәләр. Учалы районы «Ҡыҙыл партизан» колхозы партия ойошмаһының эш тәжрибәһе был өлкәлә күптәргә өлгө булып тора. Бындағы коммунистәр күп йылдарҙан бирле артель хужалығына көслө йоғонто яһап киләләр. Коммунистәр үҙҙәренең идея-политик кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә арымай-талмай эшләү менән бергә, колхозсыларҙа артель хужалығының байлығын өҙлөкһөҙ арттыра барыу тойғоһон тәрбиәләүгә бик ҙур иғтибарҙарын бүләләр. Был эш теүешле политик һәм дөйөм белем әҙерлеге булған 15 кешенән торған ауыл лекторийе һәм агитколлектив аша үткәрелә. Был колхоздың 4100 гектарҙан торған сәсеү майҙанында эшләүсе 8 производство бригадаһына, 1100 баш йылҡы малы, 2000 баш һарыҡ, 725 баш мөгөҙлө эре мал, 87 баш суҡҡанан торған фермаларына күпселек урында коммунистәр етәкселек итә. Партия ойошмаһының етәкселегендә колхоз экономик яҡтан нығыны, хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә йылдан-йыл яңы уңыштар яулап ала барыуға өлгәште. Үткән йыл игендең һәр бер гектарынан 100-әр боттан ашыуыраҡ урожай алынды. Государствоға иген һәм малсылыҡ продукттары тапшырыу планын колхоз срогынан алда үтәне. Сәсеү орлоғо, фураж һәм башҡа бөтә тейешле фондтарҙы һалғандан һуң колхозсыларҙың һәр бер хеҙмәт көнөнә 8-әр килограмм иҫәбенән иген бүленде.

Промышленность предприятиеләренең, колхоз, совхоз һәм МТС-тарҙың производство һәм политик тормошонда тәүге партия ойошмаларының роле күтәрелеүен асыҡ каүҙәләндергән бындай миҫалдарҙы бик күп килтерергә мөмкин. Хәҙер бурыс тәүге партия ойошмаларының партия-политик һәм ойоштороу эштәренең кимәлен тағы ла юғарыраҡ күтәреүҙән тора. Был бурысты уңышлы үтәү, бөтәһенән элек, тәүге партия ойошмалары секретарҙәрен тәрбиәләүгә бәйләнгән.

Республикабыҙҙың тәүге партия ойошмаларында ошо йылдың февраль айында тамамланған отчет-һайлау йыйылыштарында партия ойошмалары секретарҙәре итеп бик күп һанда йәш кадрҙар һайланды. Партия ойошмалары секретарҙәренең был яңы составы тәүге ойошмаларға етәкселек итеү буйынса актив эшкә башланы.

Партия кадрҙары, тип өйрәтә иптәш Сталин, партия һәм государство етәкселегендә хәл иткес көс булып тора. Иптәш Сталиндең был күрһәтмәләрен тормошҡа ашыра барып, ВКП(б) Өлкә Комитете һәм райкомдар, партия работниктәренең иң ҙур отряды булған тәүге ойошма секретарҙәрен тәрбиәләү буйынса күп кенә эштәр башҡарҙылар. Быйыл ғинуар айында партияның Өлкә Комитеты эреләтелгән колхоз партия ойошмалары секретарҙәренең бер айлыҡ курстарын үткәрҙе. Унда 500 кеше уҡып сыҡты. ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитеты һәм Саҡмағош, Бүздәк, Баймаҡ райкомдары тәүге ойошма секретарҙәрен тәрбиәләү, уларҙың семинарҙарын үткәреү, бюро ултырыштарында докладтарын тыңлау, урынға барып уларға практик ярҙам күрһәтеү эштәрен байтаҡ яҡшырттылар.

Ләкин партияның тәүге ойошмалары секретарҙәрен политик үҫтереүгә, улар менән ныҡышмалы эш алып барыуға етерлек иғтибар бирмәгән райкомдар ҙа бар әле. Партияның Бәйкибаш райкомы партия ойошмалары секретарҙәренең семинарҙарын, инструктив кәңәшмәләрен үткәреүҙе, бюро ултырыштарында уларҙың докладтарын тыңлауҙы, эшкә өйрәтеүҙе «артыҡ мәшәҡәт» тип ҡарай. Воскресен, Бөҙәяҙ, Белокатай райондарының ошо көндәрҙә булып үткән партия конференцияларында делегаттар райком етәкселәрен партияның тәүге ойошмалары секретарҙәрен тәрбиәләүгә, үҫтереүгә иғтибар итмәүҙәре, уларға таянып эшләү урынына администраторлыҡ итеү юлына баҫырға ынтылыуҙары өсөн ҡаты тәнҡитләнеләр. Кадрҙарҙы, тип өйрәтә иптәш Сталин, хәстәрлек менән тәрбиәләп үҫтерергә, һәр бер работникка күтәрелер өсөн ярҙам күрһәтергә, ундай работниктәр менән түҙемле «мәшәҡәтләнеү» өсөн ваҡытты йәлләмәҫкә һәм уларҙың үҫешен тиҙләтергә кәрәк.

Тәүге партия ойошмалары менән райкомдарҙың йәнле бәйләнештә булыуҙары, урындарға барып уларға практик ярҙам күрһәтеүҙәре партия ойошмалары секретарҙәрен тәрбиәләүҙә бик ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Партия эшенең тәжрибәләре менән уртаҡлашыу өсөн алдан яҡшылап әҙерләнгән семинарҙар, инструктив кәңәшмәләр үткәреүгә иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк. Семинарҙарҙың әһәмиәтен көсәйтеүгә, уларҙы оператив кәңәшмәләргә әйләндереүгә юл ҡуйылмаҫҡа тейеш.

Партия ойошмалары секретарҙәрен большевистик етәкселек стиленә өйрәтеүҙә уларҙы эштә талапсанлыҡ рухында, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү рухында тәрбиәләү партия эшенең һыналған методы булып тора. Шуның менән бергә, ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттарынан тәүге партия ойошмалары секретарҙәрен марксистик-ленинсе теория менән ҡоралландырыу, уларҙы практик эштә сыныҡтырыу талап ителә. Партияның тәүге ойошмалары секретарҙәре менән ныҡышмалы эшләү, уларҙы район һәм ҡала комитеттарының таянысы итеп әүерелдереү — хеҙмәтсәндәрҙә алда торған хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө бурыстарын уңышлы үтәү өсөн көрәшкә мобилизовать итеүҙә партия ойошмаларының боевой һәләтлектәрен күтәрәсәк. Хәҙер тәүге партия ойошмаларының бөтә партия-политик һәм ойоштороу эштәре предприятиеләрҙә май алды социалистик ярышын киң йәйелдереп, производство пландарын срогынан алда үтәүгә, колхоз, совхоз һәм МТС-тарҙа яҙғы сәсеүҙе өлгөлө үткәреүҙе тәьмин итеүгә йүнәлдерелергә тейеш.

Башҡорт АССР-ы Урман промышленносе министерствоһын бөтөрөү тураһында Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының УКАЗЫ

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы ҡарар итә:

СССР Министрҙар Советының 1951 йыл 30 мартындағы 992-се номерлы ҡарарына ярашлы рәүештә Башҡорт АССР-ы Урман промышленносе министерствоһын бөтөрергә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретарының вазифаһын үтәүсе И. ЙӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы, 1951 йыл, 5 апрель.

РЕСПУБЛИКАБЫҘ ХЕҘМӘТСӘНДӘРЕ БЕРЕНСЕ МАЙ БАЙРАМЫН ПРОИЗВОДСТВОЛА ЯҢЫ ЕҢЕҮҘӘР МЕНӘН ҠАРШЫЛАУ ӨСӨН КӨРӘШӘЛӘР

ХЕҘМӘТ ВАХТАҺЫНДА

Май алды социалистик ярышына ҡушылып, «Красный пролетарий» заводының стахановсы тимерсеһе Әхмәт Исхаҡов үҙ эшселәре менән хеҙмәт вахтаһына баҫты.

Әхмәт Исхаҡовтың хеҙмәт етештереүсәнлеге айырыуса ҙур. Уның норма үтәлеше 300 процент тәшкил итә. Был уңыштар, әлбиттә, осраҡлы түгел. Улар дауамлы. Тимерсе-стахановсы даими рәүештә үҙенең мастерлеген камиллаштыра бара, производствоға айырыуса ҡиммәтле яңылыҡтар индерә. Тик үткән йылда ғына иптәш Исхаҡов өс рационализаторлыҡ тәҡдиме яһаны. Хәҙер тимерлектә улар уңышлы ҡулланылалар. Ошо йылдың беренсе кварталында производствоға индерелгән уның өс тәҡдиме заводтың бөтә тимерлектәрендә ҙур ҡулланыу тапты. Был яңылыҡтарҙан алынған экономия унарлаған мең һум тәшкил итә.

Заводта май алды социалистик ярышы көндән-көн киңерәк ҡолас ала бара. Иптәш Исхаҡов кеүек стахановсылар, производство алдынғылары әленән-әле яңылыҡҡа, тағы ла етештереүсәнлекле эшләүгә ынтылалар. Күренекле хеҙмәт подвигтары күрһәтәләр. Бындайҙар заводта айырым кешеләр генә түгел. Улар күп. Улар менән бөтә завод коллективы ғорурлана хәҙер.

И. Моисеев.

Стрелочниктәр социалистик ярышҡа ҡушылдылар

Дим станцияһы коллективы араһында май алды социалистик ярышы йәйелдерелде. Тимер юлсылар йөк тейәү һәм бушатыу планын уңышлы үтәү, поездарҙың буш тороуҙарын ҡыҫҡартыу, эшелондарҙы юғары сифатлы һәм тиҙ формировать итеп, уларҙы гарантия маркаһы менән оҙатыу өсөн юғары йөкләмәләр алдылар.

Ярыштың тәүге көндәрендә үк тимер юлсылар үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәрен күрһәтәләр. Станция буйынса дежурный булған иптәш Филиппов сменалар члендәренең бөтә һәләтлектәрен заданиене уңышлы үтәүгә йүнәлдерә. Ул поездарҙы үткәреү буйынса тәүлеккә бирелгән заданиеның 88 процентын 12 сәғәт эсендә башҡара. Иптәш Филиппов тарафынан бөтә поездар ҙа расписание буйынса, үҙ ваҡытында оҙатылалар.

Дим станцияһының иң яҡшы стрелочнигы иптәш Кузнецов 2-се номерлы посты социалистик һаҡлыҡҡа алды. Ул Май байрамы хөрмәтенә посты үҙ көсө менән культуралы тәҫкә һәм тәртипкә индерергә һүҙ бирҙе. Уның өлгөһөндә беренсе номерле постың стрелочниктәре хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу буйынса үҙҙәренә социалистик йөкләмәләр алдылар. Алынған йөкләмәләр хәҙер уңышлы үтәлә.

Л. Слуцкий.

Иптәш Ғәлиуллин бригадаһы ярышҡа сыҡты

Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең саҡырыуы Дүрәс МТС-ы механизаторҙары араһында ҙур хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы.

Иптәш Ғәлиуллин етәкселек иткән алдынғы трактор бригадаһы социалистик ярышҡа беренсе булып ҡушылды. Был бригада уҙған йыл «Түңәрәк» колхозын хеҙмәтләндереп, трактор эштәре планын һәм шул иҫәптән туңға һөрөү планын срогында яҡшы сифатлы итеп арттырып үтәүгә өлгәшкәйне. Бригадала һәр бер шартлы тракторға 800-әр гектар ер эшкәртелде. Һәм тотош майҙанда бөртөклө ашлыҡ культураларынан юғары урожай алынды.

Бригаданың члендәре уҙған йылғы был тәжрибәләрҙән сығып, һәм мөмкинлектәрҙе, эске резервтарҙы тағы ла бер тапҡыр ныҡлап иҫәпләгәндән һуң, шартлы һәр бер тракторға кәмендә 900 гектар ер эшкәртергә, 5000 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһарға, һәр бер тракторҙы ике сменала эшләтеп, смена нормаһын бик яҡшы сифатлы итеп арттырып үтәргә йөкләмә алдылар.

Шул уҡ ваҡытта бригада аҡса средствоһына ла байтаҡ экономия яһауҙы күҙ уңында тота. Бригада члендәре һәр бер гектарҙы эшкәртеүҙең үҙенә төшөү хаҡын ике һумға арзанайтырға, тракторҙар ремонтлауҙа кәмендә 3000 һум средствоға экономия яһарға һүҙ бирҙеләр.

Баҫыу эштәренең срогына һәм сифатына ҡаты иғтибар бирреләсәк. Эш ныҡлы сәғәт графигы менән алып барыласаҡ. Шул уҡ ваҡытта бригада бөтә тракторҙарҙы һәм тағылма инвентарҙарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алды.

Иптәш Ғәлиуллин үҙе хеҙмәтләндергән «Түңәрәк» колхозында бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға һүҙ биреп, бөтә трактор бригадаларын социалистик ярышҡа саҡырҙы.

Бригада яҙғы баҫыу эштәренең башланыуын түҙемһеҙлек менән көтә. Бөтә тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар тулы әҙерлектә. Трактористәр хәҙер маршруттарҙы өйрәнәләр, баҫыусылыҡ бригадаһы члендәре менән берлектә баҫыуҙа күберәк дым туплап ҡалыу сараларын күрәләр.

С. Маликов.

Етмеш бишенсе кварталды төҙөйбеҙ

Мин Октябрьскийҙа 1943 йылдан бирле эшләйем. Ул ваҡытта хәҙерге ҡала бәләкәй генә эшселәр поселкаһы ине. Мин үҙемдең бригадам менән ҡаланы төҙөүҙә яҡындан торон ҡатнашлыҡ иттем. Тәүге йорттарҙы минең бригадам төҙөнә.

Мин етәкселек иткән бригада 1948 йылдың урталарында уҡ инде үҙенең биш йыллыҡ планын тамамланы. 1950 йылда ул ике йыл ярымлыҡ план үтәлеше бирҙе.

Хәҙер беҙ 75-се яңы кварталды төҙөүгә керештек. Бында күп квартиралы ике ҡатлы йорттар буласаҡ. Беҙ, балта оҫталары, үҙ алдыбыҙға Башҡортостан нефтселәре иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе намыҫ менән, срогынан алда үтәү бурысын ҡуйҙыҡ. Минең бригадам йыллыҡ планды 7 ай эсендә үтәү өсөн көрәшә.

Г. Ворсин,
Өсөнсө номерле төҙөлөш управлениеһының балта оҫтаһы.

Май алды социалистик ярышы киң йәйелдерелде

Өфө 8 март исемендәге тегеү фабрикаһы коллективы 1 Май байрамы хөрмәтенә яңы социалистик йөкләмәләр алды. Иптәш Бранникова етәкселек иткән отличное сифат бригадаһы члендәре быға тиклем смена заданиеһын бер ярым тапҡырға арттырып үтәй ине, улар май алды социалистик ярышына ҡушылып, көндәлек норманы 2 тапҡырға арттырып үтәргә һүҙ бирҙеләр.

Өсөнсө номерле цехтың иптәш Назарова етәкселек иткән агрегат члендәре лә апрель айы планын 25 көндә 110 процентҡа үтәргә йөкләмә алдылар. Хәҙер фабриканың бөтә цехтарында ла май алды социалистик ярышы киң йәйелдерелде.

Р. Сафин.

ПРОМЫШЛЕННОСТЬ ҺӘМ ТРАНСПОРТ АГИТАТОРҘАРЫНЫҢ РЕСПУБЛИКА КӘҢӘШМӘҺЕ

Башҡортостандың промышленность предприятиеләрендә һәм транспортында эшләүсе алдынғы агитаторҙарҙың республика кәңәшмәһе 6 апрелдә үҙенең эшен дауам итте.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар тәжрибә уртаҡлашыу буйынса актив рәүештә фекер алыштылар. Иртәнсәк беренсе булып һүҙ алыусы «Туймазыбурнефть» тресының автотрактор контораһы агитаторы иптәш Фәхретдинов коллективта агитацион-массовый эшке киң йәйелдереү арҡаһында йөк ташыу буйынса I квартал планын 142 процентҡа еткереп үтәүҙәре тураһында һөйләне. Мин, — тине ул, — автотрактор контораһының карбюратор цехында агитатор булып эшләйем. Һәм дөйөм политик темаларға беседалар үткәргәндә цех эшселәренә, автомашиналарҙың техник төҙөк булмау арҡаһында буш ултырыуҙарына юл ҡуймаҫ өсөн, беҙҙең цехҡа бәйләнгән бөтә эште намыҫ менән үтәү кәрәклеген аңлатам.

Унан ары Бәләбәй машиналар төҙөү заводы агитаторы Стреминский, Өфө 8 март исемендәге тегеү фабрикаһы агитаторы Шамматов, Черниковск ҡалаһының беренсе номерле теплоэлектроцентрале агитаторы Тарасов, «Туймазыбурнефть» тресы агитаторы Курочкин, Өфө яҙыу машиналары заводы агитаторы Шелковников, Өфө станцияһы вагондар депоһының вагон мастеры, агитатор Шангин иптәштәр сығыш яһанылар. Унан һуң ВКП(б) Өлкә Комитетының секретары иптәш Сәетбатталов йомғаҡлау һүҙе менән сығыш яһаны.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар оҙаҡҡа һуҙылған көслө алҡыштар аҫтында бөтә прогрессив кешелектең генийе, бөйөк юлбашсыбыҙ Иосиф Виссарионович Сталинға хат ҡабул иттеләр.

Кәңәшмәнең аҙағында ВКП(б) Өлкә Комитетының лекторы иптәш Аблеев кәңәшмәлә ҡатнашыусылар өсөн халыҡ-ара хәл тураһында лекция яһаны. Шуның менән кәңәшмә үҙенең эшен тамамланы.

Һүрәттә: Октябрьский ҡалаһы агитаторҙарынан бер төркөм. М. Әхмәтьянов фотоһы.

Баҫыу эштәре көндәлеге

САМОЛЕТ ЯРҘАМЫНДА

Дәүләкән. Ҡаҙаныл орлоксолоҡ совхозында самолет ярҙамында ужымдарҙы минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыу эше бара. 5 апрелдә 120 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Совхозда 750 гектар ужым һәм 56 гектар күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу эше 4-5 көндә тамамланасаҡ.

Ә. Әхтәмов.

ӨС ЙӨҘ ГЕКТАР ЕР ТЫРМАТЫЛДЫ

Абзан. (Телефон аша). Колхоз баҫыуҙарында 1330 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо һәм 360 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Ҡар һыуҙарын тотоуҙа Ворошилов исемендәге колхоз (председателе иптәш Ишемьяров), Матросов (председателе иптәш Сироткин), Калинин исемендәге (председателе иптәш Атнағолов) һәм ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙа Киров исемендәге (председателе иптәш Баев), Каганович (председателе иптәш Шамиғолов) һәм Стаханов исемендәге колхоздар уңышлы эшләйҙәр. Эш ҙур ойошҡанлыҡ менән бара.

Каганович һәм Ворошилов исемендәге колхоздарҙа тунға һөрөлгән баҫыуҙарҙы һайлап тырматыу эштәре башланды. Был колхоздарҙа бер көн эсендә 300 гектар ер тырматылды.

Я. Атнағолов.

ҠАР ҺЫУҘАРЫ ТОТОЛА

Дүртөйлө. (Телефон аша). Районның колхоздарында ҡар һыуҙары тотоу, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу эштәре уңышлы бара. Буденный исемендәге колхозда көн һайын 70-80 кеше баҫыуҙа эшләй. Бында 150 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо, 62 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды. Иптәш Сәлимьянов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы социалистик ярышта алда бара.

Матросов, Карл Маркс исемендәге колхоздарҙа ла баҫыу эштәре ойошҡанлы менән башланды. Был колхоздар 150 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тоттолар, 85 гектар ужымды өҫтәмә аҙыҡландырҙылар.

Ә. Тимерьянов.

Иван Бунеев өлгөһөндә

Ҡыйғы. Районның механизаторҙары быйыл яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа сроктарҙа яҡшы сифатлы итеп үтәп сығыу өсөн һуңғы әҙерлекте башҡаралар. Ремонттан сыҡҡан тракторҙарға һәм тағылма инвентарҙарға тикшереү үткәрәләр, асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрәләр, бригадалар араһында социалистик ярыш договорҙары төҙөйҙәр.

Ҡыйғы МТС-ының иптәш Колунов етәкселек иткән трактор бригадаһы былтыр трактор эше планын 135 процентҡа үтәп, 1150 килограмм яғыулыҡҡа һәм ремонт буйынса 4200 һум аҡсаға экономия яһағайны. Был бригада хәҙер Иван Бунеев өлгөһөндә бөтә тракторҙарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алды.

Быйыл һәр бер 10-сы көндә экономияланған яғыулыҡ һәм майлау материалдары иҫәбенә эшләргә, ремонт средстволарына 10 процентҡа экономия яһарға йөкләмә алынды. Иптәш Хөрмәтуллин етәкселек иткән трактор бригадаһы быйыл сезонда һәр бер шартлы тракторға 700 гектар ер эшкәртергә һәм һәр гектарҙан уртаса 16-шар центнер урожай алырға һүҙ бирҙе.

Ғ. Аллаяров.

Юғары урожай алыу өсөн

Мәсетле. (Телефон аша). «Үрнәк» ауыл хужалығы артеле баҫыу эштәренә яҡшы әҙерләнде. Бында баҫыу эштәре башланыу алдынан колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы булды. Колхозсылар быйыл урожай алыуҙы былтырғыға ҡарағанда 10 процентҡа күтәрергә, шуның өсөн эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланырға һүҙ бирҙеләр һәм май алды социалистик ярышына ҡушылдылар.

Иптәш Фәхретдинов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы, колхозда беренсе булып, баҫыуҙарҙа ҡар һыуҙары тотоу һәм ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу сараларын ойошторҙо.

Карл Маркс исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре лә конкрет йөкләмәләр алдылар. Колхоздың коммунистәре ауыл хужалығы машиналарын һәм инвентарҙарын социалистик һаҡлыҡҡа алыуҙы башлап ебәрҙеләр. Был башланғысҡа бөтә колхозсылар ҡушылдылар.

Н. Ғәлимов.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Эске резервтәрҙе тулы файҙаланырға

Стәрлетамаҡ район партия ойошмаһының конференцияһы булып үтте. Отчет докланы менән сығыш яһаусы райком секретары иптәш Крупеня һәм фекер алышыуҙа ҡатнашыусы иптәштәр, партия һәм хөкүмәтебеҙҙең ҙур ярҙамы арҡаһында районың экономикаһы ныҡлы барыуын күрһәтеүсе бик күп фактлар килтерҙеләр.

Үткән йылда райондағы МТС-тары һәм совхоздары күп һанда яңы тракторҙар, комбайндар һәм тағы башҡа инвентарҙар алдылар. [illegible]

[illegible] ... ге мөмкинлектәрен тулы файҙаланмау, агротехник сроктар менән иҫәпләшмәү сәбәпле йыл һайын түбән урожай алалар. Үткән йылда Шевченко, Карл Маркс, Свердлов исемендәге колхоздар бик ҙур майҙандарҙа гектарынан 19-20-шәр центнер иген алдылар. Шул уҡ шарттарҙа йәнәүсе «Ашҡаҙар», «Комбайн», «Пролетарий» һәм башҡа колхоздарҙа игендең уңышы гектарына 6-7-шәр центнерҙан үтмәне. [illegible]

[illegible] булған сәсеү майҙанын һаман да [illegible] тормағандар әле. Шулай уҡ малдарҙың һаны ла һуғышҡа тиклемге кимәлгә еткерелмәгән. Суҡасылыҡ, ҡошсолоҡ һәм йылҡысылыҡ фермалары буйынса 1950 йылдың планы үтәлмәне. Малдарҙың тоҡомон һәм продукт биреүсәнлеген яҡшыртыу эшендә лә етешһеҙлектәр күп.

Районда ауыл хужалығының уңыш тиҙлеге дөйөм республика ауыл хужалығының уртаса уңыш тиҙлегенән түбән. Делегаттар бөтә был етешһеҙлектәр райкомдың колхоз партия ойошмаларына таянмайынса эш итеүенән килеп сыҡҡан тип, дөрөҫ билдәләп киттеләр.

Фекер алышыуҙа ҡатнашыусы бик күп делегаттар агит-массовый эштә булған күп кенә етешһеҙлектәрҙе астылар.

Конференцияла ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш Ваһапов ҡатнашты. Үҙенең сығышында иптәш Ваһапов — Стәрлетамаҡ районында уңыштар менән бергә серьез етешһеҙлектәр ҙә бар. Райком, райсовет һәм хужалыҡ етәкселәре сифат күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн көрәшмәйҙәр, малдарҙың тоҡомон яҡшыртыу, продукт биреүсәнлеген күтәреү өсөн хәстәрлек күрмәйҙәр. Район промышленность үҙәктәре эргәһендә булыуға ҡарамаҫтан, баҡсасылыҡ артта ҡала, ә ул колхоздарҙың доходын арттырыуҙа ҙур сығанаҡ булыр ине, — тине. Эреләтелгән колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу өсөн партия ойошмалары алдында ҙур бурыстар торғанлығын күрһәтте.

Конференция район партия ойошмаһының эшен яҡшыртыуға йүнәлтелгән ҡарар ҡабул итте.

Райкомдың беренсе пленумы Крупеня, Исаев һәм Бычков иптәштәрҙе райком секретарҙары итеп һайланы.

Б. Мәрзәғәлиев,
(үҙ хәбәрсебеҙ).

Делегаттар райкомдың эш стилен тәнҡитләнеләр

Бөрө район партия ойошмаһы конференцияһы, район партия ойошмаһының эшен дөйөмләштереп һәм большевистик тәнҡит, үҙ-үҙеңде тәнҡитләү нигеҙендә ВКП(б) райкомы эшендә серьез етешһеҙлектәрҙе асты һәм был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү юлдарын билдәләне.

ВКП(б) райкомының эше тураһында отчет докланы менән сығыш яһаусы райком секретары иптәш Русанов, районың экономикаһын күтәреүҙә өлгәшелгән уңыштар тураһында һандар һәм фактлар килтерҙе. ВКП(б) Үҙәк Комитетының күрһәтмәләрен үтәү, партияның һәм хөкүмәтебеҙҙең ҙур ярҙамы арҡаһында, район партия ойошмаһы һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығын үҫтереүҙә ҡайһы бер уңыштарға өлгәшкән. Мәҫәлән, үҙған йыл сәсеү майҙандары, бигерәк тә бөйҙәй сәсеү ныҡ киңәйтелде. Сортлы орлоҡтар сәсеү арттырылды. Ауыл хужалығындағы төп эштәр механизациялаштырылды.

Ауыл хужалығы эштәренең культураһын күтәреү колхоздарға үҙған йылда байтаҡ юғары урожай алырға мөмкинлек бирҙе. Күп кенә колхоздар тотош сәсеү майҙандарында 100—120-шәр бот урожай үҫтереп алдылар һәм үҙҙәрен 1951 йылға етерлек сәсеү орлоҡтары менән тәьмин иттеләр. Общественный малсылыҡтың һан яғынан үҫешендә лә уңышлыҡтар бар. Мөгөҙлө эре малдар, һарыҡ һәм сусҡалар үҫтереүҙең йыллыҡ планы үтәлгән.

Районда ваҡ колхоздарҙы берләштереү буйынса ҙур эштәр үткәрелгән. Был, машина техникаһын тағы ла тулыраҡ файҙаланыуға, фән өлгәшеүҙәрен һәм алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен колхоз производствоһына ныҡыраҡ индереүгә ҙур мөмкинлектәр асты. Хәҙер эреләтелгән колхоздарға хужалыҡ һәм культура-ағартыу учреждениелары өсөн биналар, колхозсыларға стандарт йорттар төҙөүҙе киң планда алып барыу өсөн бөтә шарттар тыуҙырылды.

Шулай ҙа, район партия ойошмаһы ауыл хужалығын күтәреүҙә һәм ҡаланың промышленность предприятиеларының эшен яҡшыртыуҙа дайым үҫешкә ирешә алмаған. Мәҫәлән, бөтә мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан планлаштырғанға ҡарағанда ҡәмерәк урожай алынған. Общественный малсылыҡтың продуктивлеге иң кимәс түбән.

Бөрө ҡалаһының урындағы һәм республика әһәмиәтендәге промышленность предприятиеларының байтағында цехтарҙың эше поток системаһына күсерелмәгән, яңы техниканы киң күләмдә индереү һәм алдынғы эш тәжрибәләрен ҡулланыу саралары күрелмәй.

Ойоштороу-партия һәм массовый-политик эштәр өлкәһендә лә етешһеҙлектәр бар. ВКП(б) райкомы түбәнге партия ойошмаларына эштә тейешле ярҙам күрһәтмәй. Күп кенә ойошмаларҙың партия йыйылыштарында политик-тәрбиә һәм агитацион-массовый эш мәсьәләләре бик һирәк тикшерелә. Был йыйылыштарҙың көн тәртибе, күбеһенсә, хужалыҡ мәсьәләләрен тикшереүгә, райком тарафынан рекомендовать ителгән мәсьәләләрҙе ҡарауға ғына ҡайтып ҡала.

Коммунистарҙың идея-политик кимәлдәрен күтәреү эшендә лә ҙур етешһеҙлектәр бар. Формаль яҡтан бөтә коммунистар ҙа партия уҡыуҙарына йәлеп ителгән. Ләкин, уларҙың марксизм-ленинизм теорияһын нисек үҙләштереүҙәренә контролек алып барылмай.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа 26 делегат ҡатнашты. Улар райком һәм уның етәксе работниктарының эш стилендәге серьез етешһеҙлектәрҙе астылар.

Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Калинин, үҙенең сығышында, райком секретары иптәш Русановтың хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларына иғтибарһыҙ ҡарауы, бирелгән жалобаларҙың өсәр-дүртәр ай тикшерелмәй ятыуы тураһында һөйләне.

— Үҙған йыл,— тине ул,— «Правда» газетаһынан ВКП(б) райкомына тикшереү өсөн бер хат килтәйне. Унда, балалар йорто мөдире Вәлитовтың 20 мең һумлап государство аҡсаһын үҙләштереүе тураһында яҙылғайны. Ләкин был жалоба иғтибарһыҙ ҡалдырылды. Хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларына бындай бюрократик ҡараш, айырым факт ҡына түгел. Быйыл ҙа райком етәкселәре ошондай етешһеҙлектәрҙе ҡабатлайҙар. Килгән 17 жалобаның береһе лә ошо көнгә тиклем тикшерелмәгән.

Орджоникидзе исемендәге колхоздың партия ойошмаһы секретары иптәш Кузнецов үҙенең сығышында, ВКП(б) райкомы һәм район Советы исполкомы етәкселәренең кадрҙар һайлап алыуға формаль ҡарауҙары тураһында һөйләне. Эреләтелгән колхоздарға ауыл хужалығы специалистарын ебәрмәүҙәрен, бер ерҙә эште емереп киткән кешеләрҙе эреләтелгән колхоздарға эшкә ебәреүҙәрҙе фактлар менән күрһәтеп китте. Ул, — беҙҙең колхозда тиҡ ошондай сәбәптәр менән генә, һуңғы дүрт айҙа өс тапҡыр колхоз председателе алмашынды, — тине. Улар үҙҙәренең оҙаҡ эшләмәйәсәктәрен белгәнлектән бер төрлө лә инициатива күрһәтмәнеләр. Шул арҡала беҙҙең колхоз яҙғы сәсеүгә әҙерлекһеҙ ҡаршылай.

Киров исемендәге эреләтелгән колхоз председателе иптәш Ковалин ВКП(б) райкомының эш стилен тәнҡитләп, былай тине: райком үҙенең төп иғтибарын тиҡ хужалыҡ мәсьәләләренә генә йүнәлтә. Колхоз председателдәре аҙнаның дүрт көнөн район үҙәгендә төрлө учреждениеларҙа, райком бүлектәрендә кәңәшмәләрҙә үткәрәләр. Райком секретарҙары колхоздарҙа һирәк булалар, эште ойоштороуҙа колхоз председателдәренә һәм партия ойошмалары секретарҙарына практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. Эштең барышын район ауыл хужалығы бүлеге йыйнаған сводкаларға ҡарап ҡына беләләр. Мәҫәлән, февраль айҙарында райком секретары иптәш Русанов беҙҙең колхозға килде. Ул ауыл Советы председателе менән ун минут самаһы һөйләште лә, колхоз правлениеһына бөтөнләй инмәй, мине лә, партия ойошмаһы секретарын да күрмәй район үҙәгенә ҡайтып китергә ашыҡты. Бындай етәкселек, билдәле, ыңғай һөҙөмтәләр бирә алмай.

Киров исемендәге колхоз партия ойошмаһының секретары иптәш Чегленцев, ВКП(б) райкомы секретарҙарының ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарға ҡаршы ныҡлы көрәш алып бармауҙары, тикшерергә ебәрелгән материалдарҙы баҫып алып ҡалыуҙары фактлары булыуын, ғәйепләләрҙе яуапҡа тарттырыу урынына үҙ ҡанат аҫтарына алыуҙары тураһында һөйләне.

Делегат Десяткин, үҙенең сығышында, ВКП(б) райкомының ҡалала ойошмалары эргәһендәге партия ойошмаларының эше менән яҡындан ҡыҙыҡһынмауын, уларҙың эшенә контроль булдырмауын һәм практик ярҙам күрһәтмәүен тәнҡитләне.

ВЛКСМ райкомы секретары иптәш Степанов, партия райкомының комсомол ойошмаларындағы фактик хәлде белмәүен, етешһеҙлектәрҙе табып ваҡытында ярҙам күрһәтмәүен, комсомол йыйылыштарында партия райкомы секретарҙарының бер генә тапҡыр ҙа ҡатнашлыҡ итмәүҙәрен ҡаты тәнҡитләне.

Делегаттарҙан Овечкина, Куфтеркина, Попова иптәштәр ВКП(б) райкомының ҡатын-ҡыҙҙарҙан кадрҙар үҫтереү менән бөтөнләй шөғөлләнмәүе, районда ҡатын-ҡыҙҙарҙан йәҙәрләгән ауыл хужалығы алдынғылары, актив общественницалар булыуға ҡарамаҫтан, колхоз председателдәре итеп бер генә ҡатын-ҡыҙҙың да үрләтелмәүе тураһында һөйләнеләр.

Политик һәм хужалыҡ эштәрен дөрөҫ бәйләп алып барыу хужалыҡ һәм культура төҙөлешендә уңышты хәл итеүсе билдәләү менән бергә делегаттар ВКП(б) райкомынан партия-политик мәсьәләләр менән артабан ныҡыраҡ шөғөлләнеүҙе, партиябыҙҙың директиваларын тормошҡа ашырыу өсөн көрәште көсәйтеүҙе, түбәнге партия ойошмаларына практик ярҙам итеүҙе талап иттеләр.

Беренсе пленумда райком секретарҙары итеп Русанов, Ирмашев һәм Полюдов иптәштәр һайланды.

Х. Сафин,
(үҙ хәбәрсебеҙ).

Ауыл хужалығын күтәреү өсөн көрәште көсәйтергә

Федоровка район партия конференцияһында делегаттар райкомдың ауыл хужалығына етәкселек итеү эшендәге етешһеҙлектәренә айырыуса ныҡ туҡталдылар.

Райондың Карл Маркс, Салауат, Разин, Ворошилов исемендәге колхоздары һуғышҡа тиклем булған сәсеүлек майҙанын әле булһа үҙләштерә алмайҙар, агротехник саралар үткәрмәү сәбәпле улар түбән урожай алдылар, ә хәҙерге көндә кәрәкле сәсеү орлоҡтары менән дә тәьмин ителмәгәндәр.

Райком был колхоздарҙың эше менән етерлек тиклем ҡыҙыҡһынмаған, ундағы партия ойошмаларының иғтибарын хужалыҡ эшендәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн көрәшкә йүнәлтә алмаған, ә партияның түбән ойошмалары үҙҙәре инициатива күрһәтмәгәнләр, ваҡиғаның артынан һөйрәлеп килгәндәр.

Райондың МТС-тары күп кенә колхоздарҙа договор буйынса алған йөкләмәләрен агротехник срокта үтәмәйҙәр. 1950 йылда МТС-тар 2084 гектар майҙанда яҙғы һөрөүҙе, 2258 гектар майҙанда яҙғы сәсеүҙе, 2444 гектар майҙанда арыш сәсеүҙе һуңлап башҡарҙылар, шул уҡ ваҡытта туңға һөрөү планын 68,8 процентҡа ғына үтәнеләр. Уның да 7314 гектары бик һуң һөрөлдө.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа ҡатнашыусы делегаттар был етешһеҙлектәрҙе тағы ла тулыраҡ фактлар менән күрһәтеп бирҙеләр.

— Урып-йыйыу осорондағы иң ҡыҙыу көндәрендә, — тине Калинин исемендәге колхоз председателе иптәш Сайкин, — беҙҙең колхозға Федоровка МТС-ы бер генә комбайн да бирмәне. Шул арҡала игенде ваҡытында йыйнап ала алманыҡ.

«Азат» колхозының агрономы иптәш Осипов былай тине:

— Күп кенә колхоздарҙың баҫыуҙарын ҡый уландары баҫҡан. Бының бөтә сәбәбе хәҙерге техниканы насар файҙаланыуҙа. Ҡайһы бер трактор бригадаларында прицепщиктар файҙаланылмай, культиваторҙарҙың тырнаҡтары үткерләнмәй. МТС-тарҙа техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланмау ваҡиғалары ла йыш осрай. Былтыр Хрущев исемендәге колхозда «С—80» тракторына 24 рәтле 7 сәскес урынына бер генә сәскес, «Азат» колхозында «НАТИ» тракторына 30 тырма урынына 12 генә тырма тағып эшләнде.

— Беҙҙең МТС яңы техника менән тәьмин ителгән булыуына ҡарамаҫтан, — тине Пугачев МТС-ының директоры иптәш Иванов, — 1950 йылда трактор эштәренең планын үтәп еткермәне. Сөнки ҡайһы бер колхоз председателдәре механизатор кадрҙар әҙерләү эшенә яуапһыҙ ҡарайҙар. Трактористар курсына колхоз эшенә һалҡын ҡараусы кешеләрҙе ебәрәләр. Бигерәк тә Салауат исемендәге һәм «1 Май» колхоздарында бындай факт йыш була.

Конференция күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөүгә йүнәлтелгән ҡарар ҡабул итте һәм райкомдың яңы составын һайланы.

Райкомдың беренсе пленумында райком секретары итеп Михайлов, Әхмәтъянов, Куколкина иптәштәр һайланды.

В. Узенев.

ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ

ШАҒИРҘЕҢ ЙӨРӘГЕ

Ә. ХАРИСОВ
Филология фәндәре кандидаты

Башгосиздат республикабыҙҙың өлкән һәм күренекле шағиры Сайфи Ҡудаштың «Йөрәк йыры» тигән шиғырҙар китабын баҫып сығарҙы. Китапҡа шағирҙең, бер нисә шиғырын иҫәпкә алмағанда, һуңғы ике (1949—1950) йыл эсендә яҙған әҫәрҙәре ингән.

Сайфи Ҡудаш — Мәжит Ғафуриҙән ҡала башҡорт совет әҙәбиәтенә иң ҙур хеҙмәт күрһәткән шағир. Ҡудаш поэзияһының көсө — дөрөҫлөктә, халыҡсыл, ябай һәм тәрән мәғәнәле булыуҙа. Уның шиғырҙарында совет уҡыусыһы үҙенә таныш тормоштоң сағылышын, үҙ тойғоларының бирелешен күрә. Уҡыусы уны ниндәйҙер бер «айырым талант» итеп түгел, ә үҙенең шағирлек йөрәген халыҡ йөрәгенә ҡушып, уның менән айырылмаҫ берҙәм булып йырлағаны өсөн ярата. Ҡудаштың «Кәңәш» тигән шиғырында ҡарт уҡытыусы үҙенең уҡыусыларына: «Һәр саҡ халыҡ менән булығыҙ — ошон булыр һеҙҙең ғүмерегеҙ», ти. Был һүҙҙәрҙе шағирҙең үҙенә ҡарата раҫлап әйтеп була: уның ижады ғүмерле, сөнки ул халыҡ менән тығыҙ бәйләнгән. Һәм шуның өсөн ул уҡыусыларға яҡын, яратылып уҡыла.

Ниндәй шағир генә уҡыусыға яҡын булырға теләмәй һуң! Башҡорт совет шағирҙарының ҙур өлөшө, шағирлектең общественный ролен тәрән аңлап ижад иткәндәре, уҡыусынан яратылыу хөрмәтенә өлгәштеләр. Ләкин арала уҡыусынан «көсләп яратылырға» тырышыусыларҙы ла осратырға мөмкин әле. Партияның яҙыусылар алдына ҡуйған талаптарын тәрәнтен аңлап ижад иткән Сайфи Ҡудаш «Мин һөйәм» тигән шиғырында ана шундай «уҡыусыға бәйләнсек» ҡайһы бер шағирҙарҙың төп хатаһын, уҡыусынан яратылмауҙың сәбәптәренең береһен бик оҫта итеп күрһәтеп биргән:

Күрергә теләй тормошто
Улар тымыҡ күл итеп.
Шул күлдә ҡосаҡлап ятҡан
Бер сихырлы төн итеп.
Бик теләй улар был төндең
Һандуғасы булырға.
Талға ҡунып, таңға саҡлы
Сутылдап ултырырға.
Шулай улар был тормоштоң
Серенә инмәксе була.
Шул тормошто әҫәр итеп
Беҙгә бирмәксе була.

Сайфи Ҡудаш үҙенең был «Йөрәк йыры» йыйынтығында коммунизм төҙөүсе совет кешеләренең күп яҡлы реаль тормошоноң «серенә» керә һәм, уларҙың уйҙарын, хистәрен үҙенеке менән бергә ҡушып, ана шул шаулы тормошто образдар аша, ләкин «поэтик биҙәүгә» төрөп йәшермәҫтән, әҫәр итеп беҙгә биргән. «Мин һөйәм шаулы тормошто, көн итер өсөн тәндә. Аҫҡынам ҡаршы алырға алдағы матур көндә», ти шағир. Һәм был декларатив фраза түгел, ә шағирҙең бөтә ижадының идея һәләкәтсе.

Сайфи Ҡудаш шиғырҙарында беҙҙең заман кешеләре үҙ реаллеге менән һүрәтләнәләр. Ябай бер миҫал:

Үҫә йәмле Ағиҙел буйында
Уңған ҡыҙҙар — Банат, Әминәләр.
Улар хәҙер һаҡал урынына
Алтын йондоҙ ғына тағалар.

Был факт тормош күренеше булыуы яғынан яңы нәмә лә түгел хәҙер, ә ғәҙәттәге бер хәл. Ләкин шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең ҡайһы бер шағирҙарҙың шиғырҙарында, бигерәк тә музыкаға һалынған йырҙарында, бөгөнгө башҡорт совет ҡатын-ҡыҙҙары һаман әле бының тап киреһенсә — боҙоп һүрәтләнделәләр, күптән онотолған һаҡал һәм ҡашмаулы итеп, борондо Зөлхизә һәм Шәүрә килеп костюмендә күрһәтеләләр.

Дөрөҫлөк һәм яңылыҡты тоя белеү, алдынғы идеялар менән йәшәү Сайфи Ҡудаш ижадының общественный әһәмиәтен билдәләй. Был сифаттар уның «Йөрәк йыры» китабында тағы ла асығыраҡ күренә. Унда беҙҙең иң тормошоноң йәме сағыла, тын алышы һиҙелә, шағирҙең Ватан менән, әсәйтте ысын иткән бөйөк юлбашсыларыбыҙ Ленин, Сталин һәм улар төҙөгән партия менән, бөйөк Сталин етәкселегендә тормошто ғына түгел, тәбиғәтте лә үҙ интерестәре өсөн үҙгәртергә һәләтле совет кешеләре менән ғорурланыуы — ысын йөрәктән сыҡҡан йыр булып яңғырай. Дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ идеяһы, патриотик пафос һәм шағирҙең көслө лиризмы был йырҙы тормош поэзияһы итеп күтәрә. Ҡудаштың геройҙары — ижади хеҙмәт кешеләре, хәрәкәттәге кешеләр — коммунизм төҙөүҙә тиҙләтеүселәр. «Әҫкерт» шиғырында колхозсы ҡарт йөҙөндә «алдағы матур көндә ҡаршы алырға ашыҡҡан» ябай кеше образы айырыуса асыҡ булып күҙ алдына баҫа:

Һалмаҡ ҡелтәләр әҙләкһеҙ
Әҫкерт өҫтөнә өҫә.
Алтын әҫкерт менән бергә
Әҫкертсе бер ҡарт үҫә.
Ул күтәрелә бейеккә
Әҫкерт ҙурайған һайын.
Йөрәге тулы өмөткә,
Юғары баҫҡан һайын.
Алтынланып таң нурына
Әҫкерт күккә үрелә.
Коммунизмдең киң ҡыры
Ҡартҡа балҡып күренә.

Йыйынтыҡҡа ингән шиғырҙар тематик яҡтан бик күп төрлө. Тематик бер төрлөлөк Сайфи Ҡудаш поэзияһы өсөн ғөмүмән характерлы түгел. Уны хәҙерге замандың бөтә темалары ла, совет кешеләрен тулҡынландыра торған хәл һәм ваҡиғаларҙың бөтәһе лә ҡыҙыҡһындыра. Ул Тыуған ил һәм уның тәбиғәте тураһында ла, Мәскәү тураһында ла, совет кешеләренең тыныслыҡ өсөн көрәше хаҡында ла, тәбиғәтте үҙгәртеү тураһында ла, Кореялағы һуғыш хәлдәренә ҡарата ла, колхозсы ҡарттар һәм йәштәр, мәктәп һәм балалар хаҡында ла яҙа.

Шағир йөрәк йырының иң ҡайнарын халыҡтарҙың бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталинға бағышлай:

Был йырымда минең ҙур рәхмәтем,
Мөхәббәтем һәм пак йөрәгем.
Ҙур атаға балалыҡ хөрмәтем,
Ысын күңелдән саф теләгем.

Ләкин С. Ҡудаш Ленин һәм Сталин тураһында айырым шиғырҙар яҙып ҡына сикләнмәй. Тураһан-тура юлбашсылар хаҡында яҙылмаған шиғырҙарында ла уларҙың бөйөк образдары бар: шағирҙең бөтә темалары, иң яҡты уйҙары Ленинға, Сталинға, коммунизмға алып бара.

Жанр яғынан ҡарағанда, «Йөрәк йыры» китабы эпик һәм лирик шиғырҙарҙан, йырҙарҙан һәм баснияларҙан тора. Ләкин был — шартлы бүленеш: С. Ҡудаш поэзияһында, башҡа ҙур шағирҙар ижадындағы кеүек үк, эпос йыш ҡына лирикаға әйләнә, ә лирика эпос юғарылығына ала. Сөнки совет кешеләренең тормошонда булған нәмә поэзияла ла йәшәй — шәхси тойғо һәм уйҙар халыҡ тойғолары, уй һәм ҡараштары менән бергә ҡушыла. Һәм киреһенсә: общество тормошондағы ваҡиғалар, халыҡтың уйҙары, мөхәббәте һәм нәфрәте ижадта шағирҙең поэтик йөрәк йылыһы һәм яҡтыһы үткәрелеп индивидуаллаштерелә. С. Ҡудаштың лироэпик планда яҙылған әҫәрҙәре, мәҫәлән: «Мавзолей эргәһендә уйҙар», «Һалдат портреты», «Ғафури музейендә» кеүек шиғырҙары, уҡыусыла айырыуса көслө тәьҫир ҡалдыралар. Шулай уҡ уның «Яңы йыл теләге», «Бәхет», «Табын» шиғырҙары кеүек «шәхси лирикаһында» ла беҙ ижадҡа халыҡ эше, халыҡ көрәше менән рухланған шағирҙең йөрәк тауышын ишетәбеҙ, шағирҙең үҙен күрәбеҙ.

Сайфи Ҡудаш әҫәрҙәре Тыуған илде һөйөү тойғоһонда һуғарылып ижад ителеүҙәре менән көслө, уның «Йөрәк йыры» шуның менән ялҡынлы. Ҡудаштың шиғырҙарының да, музыкаға «кереп барған» йырҙарының да, балладаларының да идея сығанағы — совет патриотизмы. Тап ана шул ялҡынлы патриотизм шағирҙе үҙенең баснияларында һәм яңы һуғыш уты ҡабыҙырға маташыусы Уолл-стрит атомщиктарына, «кәпә-кеңдеҙ бикле ишек ватып, өйгә ингән ҡараҡ шикелле», Кореяға баҫып кергән Америка оккупанттарына ҡаршы нәфрәт менән яҙылған ҡыҫҡа шиғырҙарында үткер һәм ауыҙлы сатирик иткән.

Сайфи Ҡудаш шиғырҙары образлы һүрәтләнеүҙәренә бай. Шағир үҙенең был оҫталығын «Йөрәк йыры» китабында тағы ла тулыраҡ күрһәткән. Бына күл:

Уртаһында күк йондоҙло күктең
Балҡып торған тулған ай һымаҡ,
Ҡаҡҡыулығын ҡаплап киң баҫыуҙың
Түңәрәк күл ята ялтырап.
Күҙҙе һаҡлап торған керпектәрҙәй,
Күл тирәләй таллар баҫҡандар.
Ситтәрендә, алтын йондоҙҙарҙай,
Томбайоҡтар сәскә атҡандар.

Ләкин эш күлдә, урманды, туғайҙы һүрәтләндереп, күҙ алдына баҫтырыуҙа ғына түгел. Ана шунда кешене, уның көсөн күрһәтә белеүҙә. Салтыков-Щедрин Кольцовтың художник буларак көсө шунда: «ул тәбиғәтҡа тәбиғәт булғаны өсөн баш эймәй, ә һәр ерҙә шул тәбиғәткә өҫтөнлөк иткән кешене күрә», тип күрһәтте. Ҡудаштың да көсө тап ана шунда. Ул тәбиғәтҡа Сталин осороноң алдынғы кешеһе күҙе менән — тәбиғәтте үҙгәртеүсе, матурлаусы ижад кешеһе күҙе менән ҡарай. Шуға күрә уның поэзияһында пейзаж (тәбиғәт күренеше) декоратив картина ғына түгел. Уға ул яңы эстәлек бирә, яңы тормош индерә, уның аша коммунизм төҙөүсенең ҡарашын, тойғоларын, Тыуған илгә сикһеҙ мөхәббәтен сағылдыра. Юғарыла әҙәге килтерелгән «Күл һәм ел» шиғырында ҡоролоҡҡа ҡаршы көрәште образландырып күрһәтә. «Пәш урман», «Яңғыҙ ҡайын», «Дала юлында» шиғырҙарында ла шул уҡ идея үткәрелгән. «Кипарис» шиғырында Кавказ ҡаяһындағы «Пушкин кипарисы» һүрәтләндерелеп, бөйөк шағирҙең онотолмаҫ образы күҙ алдына баҫтырылған.

Тәбиғәттең матурлығын, уның, Лев Толстой әйткәнсә, «күҙ аша йөрәккә инә торған йәмен», пароход, паровоз кеүек «төтөнлө һәм гудоклы техникала» бөймәй. Киреһенсә, ул совет художнигендә тәбиғәт менән бергә бер бөтөн образ бирелә. Бындай бөтөнлөктө Ҡудаш «Гудок» шиғырында бик оҫта күрһәткән.

Тәбиғәт образдары аша общественный күренештәрҙе дөйөмләштереү, ҙур [illegible] ларҙы әйтеп бирә белеү оҫталығы — Сайфи Ҡудаш ижадының характерлы һәм айырыуса көслө яғы. Бында уның «Имән» һәм «Шыршы» тигән таныш ике шиғырына туҡталмай үтеү мөмкин түгел: улар — поэзияның һоҡландырғыс өлгәләре.

Имән дә, шыршы ла шағирҙәр тарафынан күп йырланған, традицион образ. Ләкин шағирҙәр быға саҡлы йыш ҡына бер үк бере ҡабатлап килделәр. Мәҫәлән, Туҡайҙан һуң шыршыһының «янырғанын» ҡәҙәр иңе әле — ул, беҙҙең поэзияла һаман шул «кеҙ көнө һәм ҡыш буйы һарғаймай торған» бер декоратив ағас булып хәлендә, балалар өсөн ёлка итеп кенә һүрәтләнеп килде. Сайфи Ҡудаш имән менән шыршы образына яңы эстәлек һалған. Улар аша бөйөк Совет ерен, уның тәбиғәтен символлаштырған. Имән йылғаһы ярында «киң ҡолаҫын йәйеп» тын ғына мәһабәт ҡарт имән ултыра. Ул Бөйөк Ватан һуғышында, «ут, тимер ямғыры эсенән үлмәй сыҡҡан һалдат шикелле», иҫән ҡалған. «Мәскәүгә тоҡалып атылған дошман пушкаһының туптарын, гвардеец бер һалдат кеүек, үҙ күкрәге менән тотҡан ул... Рейхстагҡа байраҡ элгәс һалдатҡа тейгән туптарҙы, ҡалҡан итеп үҙенең күкрәген, бәлки, ошо имән тотҡандыр!.. Һәҙер булып ошо болонға ул әле лә тора посылып; Волга буйындағы далаға сәсер ҡарт Имәндең өлгөргән орлоғон йылдар. Һәм шағир образды тамамлап, былай ти:

Был имәндең ғүмере ялғаныр
Үлемһеҙ ғүмеренә илемдең.
Ҡолаҫ йәйеп, шаулап ултырыр.
Баҡсаһында коммунизмдең!

Ә бына мәңге йәшел шыршы. Уның төбөндә Мәскәүҙе һәм «Мәскәү тураһында ултырған шыршыны» — уның образында Тыуған ерҙе һаҡлап, [illegible] биргән билдәһеҙ совет һалдатының [illegible] ята. Шыршы образында Тыуған ер [illegible] һалдаттың мәңгелек данын һаҡлай:

Бишек янындағы әсәләй,
Керпегә йомолмай Шыршының,
Ул мәңгелек йоҡоһон һаҡлай
Үҙ төбөндә ятҡан кешенең.

Башҡорт совет әҙәбиәтендә социалистик реализм принциптарын нығытыу һәм үҫтереүҙә Сайфи Ҡудаштың хеҙмәте ҙур. Ҡайһы бер «тәнҡитселәр» уны һәм башҡа алдынғы яҙыусыларҙы идеялылыҡ һәләлыгына һөйрәргә, ә башҡорт әҙәбиәтен совет Башҡортостанынан йырырға маташып ҡараныҡлар. Ҡудаш үҙенең «Тәлмәрйен» басняһындағы тәлмәрйен образында ана шул «тәнҡитселәрҙе» ҡыйып келеп, уларға дөрөҫ һәм тулы характеристика биргән. Тәлмәрйен-тәнҡитсе өсөн һандуғас йыры—архаизм, сыйырсыҡ — ғөмүмән йырсы түгел, ә һабан турғайы — насар йырсы, сөнки ул үҙенең тыуған ерен генә йырлай. Ә тәлмәрйенсә: «Тыуған ерҙе йырлау бит ул — ерләнеп, әбәһенең маҡтау — иҫкелек. Милли ғорурлыҡ тип көсәнеү — була үҙе милли сикләнеү».

Тәлмәрйен, үҙ Тыуған иле менән бер йырсыларҙы космополитизм һаҙлығына һөйрәргә тырышып, шуға өйрәтә:

Өлгө алыу кәрәк кәккүктән:
Интернационалист ул күптән.
Тыуған ере уның — ер шары,
Ә милләте — донъя ҡоштары.
Бына шағир, исмаһам, ҡарға:
Ҡарҡылдамай бер ҙә юҡ-барға.
Бер ҡыҫҡырһа — һәр кем ишетә,
Классик шул, талант, нисек тә!

Бына шундай иңе әҙәби тәнҡитсе ватанһыҙ тәлмәрйендәрен поэзияға ҡарашы. Тәбиғи, улар общественность алдында фаш ителделәр.

Сайфи Ҡудаштың «Йөрәк йыры» китабы башҡорт совет әҙәбиәтенең партиялы юнәлештә үҫеүенең яңы бер күренеше булып тора.

«Әйбер яҡшы булған һайын, уның етешһеҙлеге күҙгә ныҡыраҡ бәрелеп тора», ти Чехов. «Йөрәк йыры» йыйынтығына ингән шиғырҙар фекерҙе образлы итеп әйтеп биреү яғынан бәтәһе лә бер тигеҙ түгел. Айырым шиғырҙар прозаизмға ҡоролғандар (Мәҫәлән: «Банат», «Пәш урман», «Беҙҙең наза»). Уңышһыҙ рифмалар бар: «Уфамдың» — «бүлдерып», «йондоҙҙар» — «йылдар», «алыла» — «ҡулдарын», «йырҙа» — «была», «шиғырҙың» — «ошоған», «һымаҡ» — «йондоҙҙан». Бер ҡат уҡыу менән генә аңлауы ҡыйын һөйләмдәр осрай. Мәҫәлән: «Мәңге торған һайкал шикелле ҙур майҙанында бер ҡаланың, иғыҙ ҡайын ғүмер кисерҙе киңлегендә йәшел ҡалаһының». Был — инверсиялар (һөйләмде кире тәртиптә төҙөү) менән артығыраҡ мауығыуҙан тыуған ҡыйынлыҡ.

Былар, әлбиттә, кәмселек. Ләкин улар ғына китаптың дөйөм уңышын ҡыҙғандан тора алмайҙар.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Артель хужалығы туҙҙырыла"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 28-се номерендә Баймаҡ районы «Прииск» колхозы председателе Асылбаевтың ауыл хужалығы артеле уставын боҙоуы тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҙағы ВКП(б)-ның Баймаҡ район комитеты редакцияға хәбәрҙә күрһәтелгән фактарҙың тикшерелеүе һәм сара күрелеүе тураһында белдерҙе.

«Артель хужалығы туҙҙырыла» тигән хәбәр ВКП(б) район комитетының бюро ултырышында тикшерелеп, ауыл хужалығы артеле Уставын боҙғаны өсөн иптәш Асылбаевҡа ҡаты шелтә бирелгән. Артель эреләштерелгәндән һуң ул колхоздың председателе итеп һайланмаған.

ПРОИЗВОДСТВО НОВАТОРҘАРЫ ҺӨЙЛӘЙҘӘР

Бораулау техникаһын дөрөҫ файҙаланабыҙ

...фть сығарыуҙы өҙлөкһөҙ үҫтерөү ...өштә бораулау төп һәм хәл ит...рәүсе уйнай. Бораулау эшендә мин ...20 йыл эшләйем. Ошо ваҡыт эсел...ер бер буровойҙы тиҙерәк бораулап ...ргә үҙемдең төп бурысым итеп ҡуй...ыштап та бик күп буровойҙарҙы ...рау эшен срогынан алда тамамла...

...беҙҙең бригада тәрән скважина... бораулауға күсте. Бөгөнгө көндә ...ла 12/18-се номерлы скважинаны ... метр тәрәнлеккә бораулар ға тейеш... Уның забойы хәҙер 400 метрҙан ... Беҙ бер генә насос менән турбина ...ында бораулайбыҙ. Беҙ өлгәшкән ...ҙа тирләгә планда күрһәтелгән тиҙ... күп юғары. Февраль айы планын ... проценттан арттырып үтәнек.

Был уңыштарҙы беҙ, оборудованиеләр...ҙы ҡеүәтендә файҙаланып, бораулау ...тә күтәреү, скважинаның геологик... мәғлүмәттәрен тәрән өйрәнеү ни...әһә, долотоларҙы ентекле рәүештә ...ып алыу һөҙөмтәһендә өлгәштек.

...ктар араһында социалистик ярыш... ...ың йәйелдерҙек. Беҙҙең бригада мас... иптәш Самариндең бригадаһы менән ... эшләй.

Бораулау процесендә тоҡомдарға ярашлы ...теп долотоларҙы һайлап алыуға һәм ...рға ҙурлыҡ биреүгә ҙур иғтибар ...е. Бораулай башлағас, йомшаҡ то...ҡарға стволды теүәл вертикаль хәле...нтә тайпылдырмау өсөн долотоға ...ырлыҡты 0,5 тоннанан 7 тоннаға тик... ...ә бирҙек. Тоҡомдар ҡатылана бар...һайын беҙ инструменттәрға геологик... ...ҡ наряд буйынса күрһәтелгәнсә ...ырлыҡты арттыра барҙыҡ.

Забойҙа долотоны бөтөнләй ашалып бөткәнсегә тиклем тоторға кәрәкмәй. Бик иртә лә алыштырырға ярамай. Долотоны алыштырыу ваҡытын механик тиҙлектең кискен кәмеүенән белеп була. Әгәр ул сәғәтенә 1,5 — 2 метрға кәмеһә, беҙ, бораулауҙы туҡтатып, долотоны алыштырабыҙ. Беҙгә был зыян килтермәй, о, киреһенсә, проходка тиҙлеген арттыра ғына.

Билдәле булғанынса, турбобур балсыҡ иҙелмәһе ярҙамында хәрәкәткә килтерелә. Беҙ һәр ваҡыт яҡшы сифатлы балсыҡ иҙелмәһе булдырыуға ҙур иғтибар итәбеҙ. Уның составында ҡом күләме 0,5 — 0,7 проценттан артмай. Был турбобурҙың ремонт-ара эшләү срогын оҙайтырға мөмкинселек бирә. 382-се номерлы турбобурҙы беҙ ремонтһыҙ 100 сәғәт урынына 160 сәғәт эшләттек.

12/18-се номерлы буровойҙы бораулағанда беҙҙең бригадаға «СП-3» маркалы яңы конструкциялағы силовой приводты ҡулланып эшләү бәхете төштө. Был яңы приводтың, элеккеләргә ҡарағанда, өҫтөнлектәре күп. Бөтә оборудованиелар менән бурильщик үҙе идара итә. Ике, өс һәм дүрт дизель-моторҙы бер юлы эшләтергә мөмкинселек бирә. Ә дизель-моторҙарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу инструментте күтәреү һәм төшөрөү операцияһын тиҙләтә.

Беҙҙең бригада алдынғы техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу, новаторҙарҙың эш тәжрибәләрен ҡулланыу юлы менән буровойҙарҙы тиҙерәк эксплуатацияға биреү өсөн көрәшә.

М. Голяков,
«Ишембайнефть» тресының бораулау мастеры.

Беҙҙең ижади уңыштарыбыҙ

Мин үҙем рационализаторлыҡ эше менән ...46 йылдан бирле шөғөлләнәм. Һәр йыл ...ын 6 — 7 рационализаторлыҡ тәҡ...имдерен, уларҙы үҙ ҡулым менән тор...ҡа ашырам.

Мин рационализаторлыҡ эштә бер ва...ытта ла бер үҙем генә эшләмәйем. Бер...ләп эшләү, мөһим бурыстарҙы коллектив ...рәштә хәл итеү — ул социалистик об...ственың законы. Беҙ цехта комплексҙы рационализаторҙар бригадаһы ойоштороҡ. ...ы беҙгә айырым мөһим техник проблемаларҙы еңел генә хәл итеү мөмкинлеген ...рә.

Мәҫәлән, беҙҙең цехта яңы приборҙарҙы ...ынлаштырыу өсөн өс урында өҫтәмә ...тәр ҡуйыу планлаштырылғайны. Улар...ы ҡуйыу өсөн 50 мең һумдан артыҡ ...сраф талап ителә ине һәм был щиттар, ...ың күп кенә производство майҙанын би...п, эш урындарын тығыҙайтасаҡтар ине. ...ҙең рационализаторҙар бригадаһы, цех...а бары тиклем йәшәп килгән ике контроль щитка бик мөһим техник камиллаштырыу индереп, яңы приборҙарҙы шул ...итеркә урынлаштырҙы. Һөҙөмтәлә өҫтәмә ...иттәрҙе ҡуйыуҙың кәрәге ҡалманы. Был ...ҙә күп аҡса һәм производство майҙанда...ы бушатыу мөмкинлеген бирҙе.

Беҙҙең нефть эшкәртеү заводында яңы ...ерҙәр өсөн 10 миллиметр ҡалынлы...ғы ҙур щиттар элек электр дреле ...ән газорез менән киҫелә ине. Былай ...ыу хеҙмәтте бик күп талап итә һәм ...ктр дреленән сыҡҡан осҡондар беҙҙең ...от шарттарында янғын сығыу ҡурҡыныс тыуҙыра. Беҙ иптәш Бородин менән ...т ҡырҡыу өсөн махсус станок уйлап ...ыҡ. Щиттарҙы шул станокта ҡыр... хеҙмәт етештереүсәнлеген ике тап...ға арттырҙы, эштең сифатын байтаҡ яҡшыртты һәм янғын сығыу ҡурҡынысы бөтөрөлдө.

Тәрән крекинг мейесенә продукт бирә торған юғары баҫым һәм юғары эҫелек шарттарында эшләүсе регулятор бик тиҙ тутығыа һәм бик тиҙ туҙып эштән сыға ине. Был хәл беҙҙең эшебеҙгә бик күп тотҡарлыҡ яһап килде. Беҙ мастер Ульянов һәм Чащихин иптәштәр менән берлектә ҡойолоп эшләнгән регулятор урынына тутығыуға бирешмәй торған иң юғары сифатлы ҡоростан сүкеп эшләнгән регулятор яһаныҡ. Гидравлик һынау ваҡытында яңы регулятор технология буйынса ҡаралған 120 атмосфералы баҫымға бик еңел сыҙаны. Беҙҙең иҫәп буйынса ул 280 атмосфералы баҫымға ла сыҙарға тейеш. Хәҙер шундай уҡ ҡоростан икенсе регулятор яһау өсөн әҙерлек алып барабыҙ. Беҙ был регуляторға гидравлик һынауҙы 280 атмосфералы баҫымда үткәрергә уйлайбыҙ.

Иптәш Ульянов менән икәүләп уйлап сығарған ҡоро нефть газы ағыуылығын тотоноуҙы теүәл иҫәпләүҙе яҡшыртыуға һәм уны ҡулланыуҙы тәртипкә һалыуға йүнәлтелгән икенсе тәҡдимем дә бик ҙур уңыш бирҙе. Был тәҡдимде тормошҡа ашырыу беҙҙең заводҡа һәр йыл һайын бер ярым эшелон нефть продукттарына экономия яһау мөмкинлеген бирә.

Беҙҙең хеҙмәтебеҙ Ватаныбыҙҙың ҡеүәтен тағы ла нығыраҡ арттырһын һәм тормошобоҙ тағы ла күңеллерәк, мулыраҡ булһын өсөн мин 1951 йылда ла рационализация эштәрендә ҙур уңыштарға өлгәшергә һәм ике эшсене рационализация эшенә өйрәтергә һүҙ бирәм.

М. Фатҡуллин,
Өфө нефть эшкәртеү заводының мастеры.

Уҡытыусылар кәңәше

Маҡар. Районда һәр айҙа бер тапҡыр уҡытыусылар кәңәше үткәрелә. Бында уҡытыусылар өсөн политик һәм фәнни темаларға лекциялар уҡыла, шулай уҡ методик темаларға сығыштар ойоштороло. Бында уҡытыусылар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар. Март айында булып үткән уҡытыусылар кәңәшендә «Тел ғилеме тураһында иптәш Сталин», «Кешелөр аңындағы капиталистик ҡалдыҡтарға ҡаршы көрәш» тигән темаларға лекциялар булды. Бында 240 уҡытыусы ҡатнашты.

С. Макарский.

Башҡорт совет әҙәбиәте һәм тыныслыҡ өсөн көрәш

Күптән түгел Башҡорт государство педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультете «Башҡорт совет әҙәбиәте һәм тыныслыҡ өсөн көрәш» тигән темаға әҙәби кисә үткәрҙе. Кисәлә бөтә факультеттәрҙең студенттәре һәм уҡытыусылары ҡатнашты. Бында әҙәбиәт теорияһы уҡытыусыһы иптәш Миняев доклад менән сығыш яһаны.

Был кисәлә шағирҙәрҙән Рәшит Ниғмәти, Ҡирәй Мәргән, Назар Нәжми һәм башҡа иптәштәр ҡатнаштылар. Улар үҙҙәренең тыныслыҡ өсөн көрәш темаһына арналған әҫәрҙәрен уҡынылар.

Ш. Янбеков.

Мәктәп бинаһы һалына

Ғафури районы Сәетбаба ауылында культура-ағартыу эштәре йылдан-йыл киңәйә бара. Уның урта мәктәбендә хәҙер 568 кеше уҡый. Улар өсөн һәм шулай уҡ уҡытыусылар өсөн дә тормош һәм уҡыу-уҡытыу шарттары йылдан-йыл яҡшыртыла бара.

Быйыл 350 мең һумлыҡ яңы стандарт мәктәп бинаһы һалына башланы.

Был бина һалынып бөткәс, элекке мәктәп бинаһы төрлө фәнни кабинеттәр һәм ситтән килеп уҡыусы балалар өсөн интернат итеп файҙаланыласаҡ.

И. Мәүләтколов.

Эреләтелгән колхоз уҡыу өйөндә

Калинин исемендәге эреләтелгән колхоз уҡыу өйөнөң (Бөрө районы) мендән дә артығыраҡ китабы бар. Актив китап уҡыусылар һаны 200-гә яҡын. Лекторҙар группаһы членәре март айында 4 доклад һәм лекция уҡынылар.

Лекторҙар группаһы быйыл һәр төрлө темаларға бөтәһе 74 доклад һәм лекция яһарға тейеш.

Ғ. Ғәтиәтуллин.

Агит-культбригада колхоздарҙа

Балтач. Район культура йорто эргәһендәге агит-культбригада ошо көндәрҙә Аҫҡын леспромхозының Талыҡ участкаһындағы Васельевка, Ҡаюм, Иҫке Утар ауылдарында булып, унда урман эшселәренә күп кенә постановка һәм концерттәр бирҙе. Бында ул Мәжит Ғафуриҙең «Ҡара йөҙҙәр», Татарстандың йәш драматургы Абдулла Әхмәттең «Дуҫлыҡ» пьесаһын сәхнәгә ҡуйҙы.

Тамашасылар иптәш Муллағәлиев тарафынан башҡарылған татар көйҙәрен, Сафин, Нуретдинов иптәштәрҙең бейеүҙәрен һәм Арсланов тың гармонда уйнауын айырыуса тыңлаһыныу һәм ихтирам менән ҡаршы алдылар.

Китап уҡыусылар һаны арта

Аҫҡын районының Ҡыйғазы ауыл Советә уҡыу өйөнөң китаптар фонды йылдан-йыл үҫә. Ундағы китаптарҙың һаны хәҙер меңгә етә. Уҡыу өйө 20 төрлө газета һәм журналдар алдыра.

С. Ғатин.

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Финанс планын ваҡытында үтәү өсөн

Йылдан-йыл үҫә барыусы Совет государствоһының бюджеты Советтәр Союзының артабан нығыуын һәм беҙҙең государствобыҙ ҡоролошоноң капиталистик ҡоролоштан сағыштырмаслыҡ өҫтөн булыуын күрһәтә.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре, хеҙмәтсәндәрҙең көн-күрештәрен артабан яҡшыртыу саралары халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарын да өҙлөкһөҙ финансировать итеп барыуҙы талап итәләр.

Шаран районының финанс работниктәре халыҡ араһында киң аңлатыу эштәрен алып барыу юлы менән аҡса туплау планын кварталдан-кварталға арттырып үтәп баралар. 1950 йылда ауыл һәм район бюджеттәре доходтар буйынса 101,7 процентҡа, расходтар буйынса 99 процентҡа үтәлде.

Быйыл, беренсе кварталда халыҡтан һәм колхоздарҙан аҡса туплау планы 101 процентҡа үтәлде. Шул иҫәптән, госстрах буйынса үтәлеш 100, заем һәм вкладтар буйынса 105 процент тәшкил итте.

Беҙгә аҡса туплау пландарын срогынан алда үтәүгә массовый-аңлатыу һәм әҙерлек эштәренең дөрөҫ ҡуйылыуы ҙур ярҙам итә. Мәҫәлән, ауыл хужалығы налогын һалғансыға тиклем һәр бер хужалыҡтың доходы тулыһынса һәм дөрөҫ итеп иҫәпкә алына. Халыҡҡа налог һалыуҙың тәртибе, льготаларҙың кемдәргә бирелеүе, түләү сроктары, ул налогтың ҡайҙа китеүе тураһында аңлатыла. Һәр бер ауылда налог агенты һәм налог инспекторҙары группалап беседа үткәрәләр. Түләү ҡағыҙҙары граждандарға бригада йыйылыштарында тапшырылалар. Срогынан элек индерелгән аҡсаның государствоға ниндәй ҙур файҙа килтереүе хаҡында аңлатыла. Был метод менән эшләү налог агенттәренә генә түгел, бәлки һәр бер налог түләүсегә лә үҙ бурысын яҡшылап үтәү өсөн мөмкинлек бирә. Граждандар кемдең күпме түләгәнлектәрен алдан белеп торалар һәм иптәштәренән, күршеләренән ҡалышмаҫҡа тырышалар.

Район финанс бүлеге төҙөлгән план нигеҙендә үҙ сиратында налог агенттәре менән даими эш алып бара. Айға ике тапҡыр налог агенттәре менән производство кәңәшмәләре үткәрәбеҙ. Бындай кәңәшмәлә аҡса туплау буйынса алынған йөкләмәләрҙең үтәлеше тураһында тикшерелә, етешһеҙлектәр тәнҡитләнә һәм яҡшы агенттәрҙең эш өлгөләре уртаҡлашыла. Бынан тыш, айға икешәр тапҡыр агенттәр менән техник уҡыуҙар үткәрелә.

Беҙгә эшебеҙҙә районның етәксе ойошмалары ҙур ярҙам күрһәтәләр. Район Советы исполкомы финанс бүлеге менән оператив эшләй. Айға бер тапҡыр район Советы исполкомының ултырышында аҡса туплау мәсьәләһе тикшерелә. Был ултырышта финанс работниктәренән тыш ауыл Советтәре исполкомдарының председателдәре, заем уполномоченныйҙары ҡатнашалар.

Райисполкомдың даими контроле финанс бүлеге һәм ауыл Советтәре исполкомдары өсөн ентекле ярҙам булып тора. Шуға күрә, һәр бер ауыл Советында тип әйтерлек бюджет комиссияһы яҡшы эшләй. Налог агенттәренә һәм активҡа ярҙам күрһәтә. Беҙҙең налог агенттәребеҙҙең һәр ауылда 15 — 25 кешенән торған финанс активы бар. Налог агенттәре ошо актив аша халыҡ араһында киң аңлатыу эшен үткәрәләр. Улар налог түләүҙәрен һәм сборҙарын беренсе түләп үҙҙәре аҡса туплауҙа өлгө күрһәтәләр, башҡаларҙы ла тиңләшергә саҡыралар.

Налог агенттәренән К. Ғәниев (Дүртәйлә ауыл Советы), М. Зарипов (Түбән Зайт ауыл Советы), З. Абдуллин (Ерекле ауыл Советы), И. Шакиров (Шаран-баш-Киәз ауыл Советы) һәм башҡа иптәштәр аҡса туплау планын квартал һайын арттырып үтәп килаләр.

Халыҡтан түләүҙәрҙе йыйнауҙы дөрөҫ ойоштороу иң мөһим участка булып тора. Беҙҙең налог агенттәребеҙ түләүҙәрҙе йыйыр өсөн ауылдарға сығалар. Үҙҙәренең килеүҙәре тураһында халыҡҡа һәм активҡа алдан уҡ хәбәр итеп ҡуялар.

Аҡса туплау буйынса ауыл Советтәренең социалистик ярышында Дүртәйлә ауыл Советы беренселекте алып килә. Бер йылдан артыҡ инде был ауыл Советы райисполкомдың күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙендә һаҡлай. Ауыл Советы 1950 йылғы планды 110 процентҡа үтәгәйне. Быйыл, беренсе квартал планын 112 процентҡа үтәне. Сөнки ауыл Советы хеҙмәтсәндәре араһында массовый-аңлатыу эше яҡшы ҡуйылған. 33 кешенән торған финанс активы был тәңгәлдә ҙур эш алып бара. Активистәр араһында ауыл Советы депутаттары, уҡытыусылар, бюджет комиссияһы членәре бар. Бында финанс эштәренең бөтә формалары ла оҫта ҡулланыла. Мәҫәлән, колхозсыларҙың дөйөм йыйылыштарында совет заемының әһәмиәте, үҙ иркең менән страховать итеү, бюджеттең әһәмиәте тураһында лекциялар уҡыла. Льготалар хаҡында халыҡҡа ентекле рәүештә аңлатыла. Социалистик хужалыҡтың һуғыштан һуң ирешкән уңыштарына, коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә арнап беседалар үткәрелә. Аҡса туплау планы һәм бюджеттен үтәлеше тураһында ауыл Советы сессияһында бер йыл эсендә дүрт тапҡыр тикшерелде. Иптәш Ғәниев етәкселек иткән бюджет комиссияһының отчеттары тыңланылды. Дүртәйлә финансистәре һәм депутаттарының был өлгөлө эштәре башҡа ауыл Советтәренә лә таратыла. Хәҙер Түбән Зайт, Нәрей һәм башҡа ауыл Советтәре лә дүртәйләләр кеүек эшләйҙәр.

Партия һәм хөкүмәтебеҙ тарафынан финанс работниктәре алдына бик яуаплы бурыс — Бөйөк Ватаныбыҙҙың хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөн өҙлөкһөҙ финансировать итеүҙе тәьмин итеү бурысы ҡуйылған. Беҙ, Шаран районы финанс работниктәре, был ҙур эште намыҫлы үтәү өсөн көрәшәбеҙ һәм май алды социалистик ярышын киң йәйелдерәбеҙ. Был, беҙгә финанс бурыстарын тағы ла уңышлыраҡ башҡарыу мөмкинлеген бирәсәк.

И. Әһлетдинов,
Шаран район финанс бүлеге мөдире.

Хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын һәм ғаризаларын ҡарауға күберәк иғтибар итергә

Оло Теләк, Нуриман, Ғафури һәм Миәкә районҙарының күп кенә ауыл Советтәрендә хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын һәм ғаризаларын тикшереү эше тейешле юғарылыҡҡа ҡуйылмаған.

Күп кенә ауыл Советтәрендә ғаризалар һәм жалобалар закон менән билдәләнгән срокта ҡаралмайҙар.

Оло Теләк районының Суворо-Гәмель ауыл Советына граждандарҙан ингән 28 ғариза һәм жалобаның 18-е 20—85 көн, Ғафури районының Красноусол поселка Советында 8 ғариза һәм жалоба ике ай ярым ваҡыт ҡаралмай ятҡан.

Жалобаларҙың һәм ғаризаларҙың байтаҡ өлөшө ауыл Советы исполкомы ултырышында тикшерелмәйенсә, ауыл йәки поселка Советы председателенең үҙе тарафынан ғына билдә яһала. Мәҫәлән, Нуриман районы Никольский ауыл Советына граждандарҙан ингән 20 жалобаның 13-ен ауыл Советы председателе үҙе генә «ҡарап», билдә яһаған.

Жалоба йәки ғариза биреүселәрҙең күптәренә уларҙың ғаризаһы буйынса ниндәй ҡарар сығарылыуы хаҡында яуап бирелмәй.

Ҡайһы бер ауыл һәм поселка Советтәре етәкселәренең хеҙмәтсәндәр жалобаларына яуапһыҙ һәм бюрократтарса мөнәсәбәт итеүҙәре арҡаһында, ауыл ойошмаларының һәм учреждениеләренең эшендә булған серьез етешһеҙлектәр асылмай һәм үҙ ваҡытында бөтөрөлмәйҙәр. Оло Теләк районының Урман поселка Советына граждании Теплов сельпо магазиненең насар эшләүе, һатыусыларҙың потребителдәргә насар мөнәсәбәте, совет сауҙаһы принциптәрен боҙоу тураһында ғариза бирә. Был сигнал буйынса магазиндең эшен тикшереп, тейешле сара күреү урынына, иптәш Тепловтың жалобаһы ҡаралмаған килеш эш ҡағыҙҙары араһына теге ҡуйыла.

Граждандар тарафынан бирелгән жалобаларҙың күпселеге, налог буйынса льготалар юллауға ҡайтып ҡалалар. Улар ауыл йәки поселка Советында алдан ҡаралмайынса, финанс органдарына һәм Әҙерләүҙәр министерствоһының уполномоченныйҙары аппараттарына ебәреләләр. 9 жалоба биреүсегә был турала бер тәр... лә ла хәбәр итмәйҙәр. Миәкә районының Миәкә баш ауыл Советында эш бына шулай тора.

Ҡайһы бер ауыл Советтәре исполкомдарында эш ҡағыҙҙары һәм хужалыҡ кенәгәләренең учеты тәртипкә һалынмаған. Был хәл, йыш ҡына ваҡиғаларҙа, финанс һәм әҙерләүҙәр органдарының налогтар һалғанда яңылыш хәрәкәт итеүҙәренә һәм жалобалар биреүгә килтерә. Миҫалға шундай бер фактты күрһәтергә мөмкин. Суворо-Гомель ауыл Советында (Оло Теләк районы) 1951 йылда, хәрби хеҙмәткәр Лысовтың семьяһына налог һалған ваҡытта, закон менән ҡаралған льготаны бирмәйенсә, ҙур яңылышлыҡ эшләйҙәр. Уның төп сәбәбе — ауыл Советы работниктәренең хужалыҡ кенәгәһендә граждании Лысовтың Совет Армияһы сафында хеҙмәт итеүе хаҡында тейешле билдә яһамағанлыҡтарынан килеп сыға. Һәм шуның арҡаһында ҙур волокитасылыҡ тыуа, хәрби хеҙмәткәр Лысов юғары партия-совет органдарына мөрәжәғәт итергә мәжбүр була.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы был мәсьәләне үҙенең нәүбәттәге ултырышында ҡарап, Оло Теләк, Ғафури, Нуриман район Советтәре исполкомдары етәкселәренең иғтибарын ауыл һәм поселка Советтәрендә хеҙмәтсәндәрҙең ғариза, жалобаларын ҡарауҙа йәшәп килгән серьез кәмселектәрҙе ашығыс бөтөрөүгә йүнәлдерҙе һәм практик саралар билдәләне.

Хеҙмәтсәндәрҙең ғаризалары, жалобалары һәр бер ауыл, поселка Советында регистрацияланырға, ныҡлы иҫәпкә алынып барылырға һәм үҙ ваҡытында тикшерелеп, исполкомдарҙың ултырыштарында ҡаралырға тейеш. Волокитасылыҡҡа юл ҡуймаҫҡа, ә һәр бер ғаризаға, жалобаға хәстәрлекле мөнәсәбәт булдырырға, уларҙың һөҙөмтәләрен хеҙмәтсәндәргә мотлаҡ еткерә барырға кәрәк. Ғаризалы, жалобаларҙы дөрөҫ һәм ваҡытында ҡарап хәл итеү — ул совет органдарының эшендәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә, эште артабан яҡшыртыуға ярҙам итә.

С. Ҡорбанғолов,
Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының эштәр башҡарыусыһы.

Баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының хеҙмәттәшлеген нығытырға

Колхоздарҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу МТС тракторҙарын һәм ҡатмарлы ауыл хужалығы машиналарын, шулай уҡ колхоздарҙың производство средстволарын һәм эшсе көстәрен юғары етештереүсәнле итеп файҙаланыу өсөн, трактор һәм баҫыусылыҡ бригадалары эштәрен дөрөҫ бәйләнештә алып барыу өсөн кәрәкле шарттарҙы тыуҙырыуҙа ҙур әһәмиәт тота. Ваҡ артелдәрҙе эреләтеү айҡанлы баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының һәм уларҙың бригадирҙәренең роле үҫә, производство заданиеларен үтәүҙә яуаплылыҡтары арта.

Колхоздарҙы эреләтеүгә тиклем бик күп трактор бригадалары бер генә артелде хеҙмәтләндермәне, ә, киреһенсә, бер нисә колхозды хеҙмәтләндерҙе. Былай эшләү трактор бригадаһын хеҙмәтләндереүҙе ҡыйынлаштырҙы, трактор бригадаһын хеҙмәтләндереүсе колхозсылар йыш алмашындылар. Ә был, үҙ нәүбәтендә, тағылма ҡоралдарҙы файҙаланыуҙа әйәһеҙлек тыуҙырҙы, ойоштороу яғынан булған етешһеҙлектәр арҡаһында тракторҙарҙың буш тороуҙарын йыйылтты. Трактор бригадаһы бәләкәй участкаларҙа эшләргә мәжбүр булды. Был, машиналар етештереүсәнлегенең түбән булыуына алып барҙы.

Колхоздарҙы эреләтеү айҡанлы трактор бригадалары өсөн эш шарттары тамырынан уҡ үҙгәрҙе. Хәҙер трактор бригадаһының бер нисә колхозды хеҙмәтләндереү ваҡиғаһы булмаясаҡ. Ул бер генә колхозды хеҙмәтләндерәсәк. Ҡайһы бер ҙур колхоздарҙа бер йәки ике баҫыусылыҡ бригадаһын хеҙмәтләндергән 2-3 трактор бригадаһы эшләйәсәк.

1951 йылда республикабыҙ МТС-тары һәм колхоздары алдында ҙур бурыстар тора. Улар быйыл, 1950 йылға ҡарағанда, байтаҡ ҙур эш башҡарырға тейештәр. Быға тик МТС-тарҙың машина-трактор паркының, шулай уҡ колхоздарҙың йәнле тартыу һәм эшсе көстәренең етештереүсәнлеген ҡырҡа күтәреү менән генә өлгәшергә мөмкин.

Трактор бригадаларын ойоштороу яғынан нығытыу һәм уларҙың эшен колхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары эше менән тығыҙ дуҫлыҡта алып барыу машина-трактор паркының етештереүсәнлеген күтәреүҙең, эш сифатын яҡшыртыуҙың, эштәрҙе билдәләнгән сроктарҙа үткәреүҙең һәм юғары урожай алыуға бөтә резервтарҙы ылыҡтырыуҙың хәл иткес шарты булып тора.

Трактор бригадаһы менән берлектә колхоздың баҫыусылыҡ бригадаһы үҙенә беркетелгән участкаларҙан юғары урожай алыу өсөн бөтәһен дә эшләргә тейеш. Бының өсөн сәсеү әйләнештәре тәртибе ныҡ һаҡлана, таҙа сортлы орлоҡтар әҙерләнә, тупраҡта дым һаҡлау саралары күрелә, ашламалар индереү һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү буйынса эштәр үҙ ваҡытында башҡарыла, тракторҙар һәм комбайндар һыу һәм яғыулыҡ менән өҙлөкһөҙ тәьмин ителә, колхоз баҫыуҙарында эшләгән трактористәр һәм комбайнерҙар өсөн тормош шарттары тыуҙырыла.

Трактор бригадаларының хәҙер сәғәт графиге буйынса эшләүгә күсеүҙәре осорында баҫыусылыҡ бригадаларында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу талабы айырыуса арта. Элек тракторист, комбайнер һәм молотилка машинисы өсөн көндәлек норма билдәләү менән сикләнелһә, хәҙер, сәғәт графиге буйынса эшләгәндә, эштең һәр сәғәттә тигеҙ алып барылыуы һаҡлана. Сәғәт графиге ваҡыт иҫәбен көндәр һәм аҙналар иҫәбендә алып бармай, ә сәғәттәр һәм минуттар иҫәбендә алып бара, эштең өҙлөкһөҙ алып барылыуын талап итә. Шуға күрә трактор бригадаһының сәғәт графиге буйынса ойошторолған эше аныҡ эшләүҙе талап итә, баҫыусылыҡ бригадаһының һәр бер члененең ваҡытты тығыҙ файҙаланыуын һәм һәр ике бригаданың да эштә татыусылығын талап итә. Баҫыусылыҡ бригадаһын һәр яҡлап нығытыу һәм уның трактор бригадаһы менән берләп эшләүен дөрөҫ ойоштороу колхозда общественный хужалыҡты һәр яҡлап үҫтереү өсөн техник һәм агрономик культураны артабан күтәреүҙе тәьмин итә.

Трактор бригадаларының эштәрендә яһалған анализдар түбәндәгеләрҙе күрһәтәләр: колхоздарҙа машиналарҙы файҙаланыуҙағы һәм юғары урожай алыуҙағы уңыштар тура-тура трактор бригадаларында хеҙмәтте ойоштороу һәм эште баҫыусылыҡ бригадаһы эштәре менән ярашлы рәүештә алып барыу мәсьәләләрен дөрөҫ хәл итеүгә ҡарай. Мәҫәлән, Ауырғазы районы Ворошилов исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән Шланлы МТС-ының трактор бригадаһында трактористәр составы оҙаҡ йылдарҙан бирле үҙгәртелмәй. Шулай уҡ бригаданы хеҙмәтләндереүсе колхозсылар составы ла 2—4 йыл буйына алыштырылмайынса эшләй. Бында машиналар үҙ ваҡытында яҡшы тәрбиәләнә, был смена нормаларының систематик үтәлеүен тәьмин итә. Бында шулай уҡ трактор бригадаһы менән берлектә баҫыу эштәренең сифатына контроль булдырылған. Һөҙөмтәлә бригадала 1950 йылда договор йөкләмәһен билдәләнгән күләмдәрендә һәм сроктарында үтәне, юғары урожай алыуҙы тәьмин итте.

Шул уҡ МТС-тың «Ҡыҙыл былоҡ» колхозында эшләгән трактор бригадаһы составында ҙур ағымсылыҡ булды. Бында шулай уҡ бригаданы хеҙмәтләндереүсе колхозсылар ҙа йыш алмашындылар. Трактор бригадаһы баҫыусылыҡ бригадаһы менән бәйләнеш тотоп эшләмәй. Һөҙөмтәлә трактор бригадаһы үҙенең йөкләмәһен үтәмәне, колхоз урожайҙы планда ҡаралғандарынан кәм алды.

Республикабыҙ колхоздарында баҫыу эштәрен механизациялаштырыу кимәле йыл һайын арта. Күпселек колхоздарҙа баҫыу эштәре тулыһынса тип әйтерлек механизациялаштырылған. Мәҫәлән, Бүҙәк районы Ворошилов исемендәге колхозда 1950 йылда сәсеүҙәге төп эштәр 80 — 100 процентҡа механизация көстәре менән үткәрелде.

Игенселек культураһын күтәреүгә өлгәшеү өсөн колхоздарҙағы файҙаланыла торған ерҙәрҙе тулы тәртипкә килтерергә, унда сәсеү әйләнештәренең айырым баҫыуҙарындағы үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алырға кәрәк. Был, айырым колхоздарҙың үҙенсәлектәрен генә түгел, хатта сәсеү әйләнештәрендәге айырым участкаларҙың да үҙенсәлектәрен (ҡыйланыу кимәлен, тупраҡ төрлөлөгөн һәм башҡаларын) ныҡ иҫәпкә алып, агротехник сараларҙы планлаштырыу өсөн талап ителә. Шулай уҡ ул, үҙ нәүбәтендә, тракторҙар эше планын дөрөҫ билдәләүгә, ауыл хужалығы эштәренең айырым осорҙарында трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларының эштәрен бәйләнешле итеп алып барыуға ярҙам итер.

Трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларының эштәрен тығыҙ бәйләнештә алып барыуҙы нисек ойошторорға кәрәк? Быны ауыл хужалығы эштәренең иң яуаплы ике осорондағы — яҙғы сәсеү һәм урожай йыйнау ваҡытындағы эштәрҙәге миҫалдарҙа күрһәтергә мөмкин.

Яҙғы осорҙа дым туплауҙағы бөтә эштәр тракторҙар һәм колхоздың йәнле тартыу көстәре менән башҡарыла. Сөнки был эштәрҙе үткәреүҙең агротехник срогы 2-3 көн генә булып тора. Бынан һуң, трактор тунға һөрөлгән майҙандарҙы культивациялау, ашлыҡ сәсеү, яҙғы һөрөү, пар күтәреү һәм башҡа эштәргә тотона. Колхоздың йәнле тартыу көстәре ужым һәм күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәрен яҙ тырматыу, өҫтәмә аҙыҡландырыу, ашламаларҙы һәм орлоҡтарҙы ташыу һәм ашлыҡ сәсеү эштәрен башҡара. Бынан тыш, колхоз менән МТС араһында төҙөлгән договорҙа күрһәтелгән ҡайһы бер участкаларҙы эшкәртеү йәнле тартыу көстәре тарафынан башҡарыла.

Урожай йыйнау осоро тракторҙар өсөн дә, шулай уҡ йәнле тартыу көстәре өсөн дә көсөргәнешле эш ваҡыты булып тора. Был осорҙа бик күп эшсе көсө тупланырға тейеш.

Был осорҙа тракторҙар комбайн менән урожай йыйнау, ҡамыл төптәрен йомшартыу, тунға һөрөү, механизациялаштырып һалам йыйнау, ужым сәсеүгә пар майҙанын әҙерләү, ашлыҡ һуғыу эштәрен башҡара. Колхоздың йәнле тартыу көстәре комбайн менән урылмаған майҙанда урожай йыйнау, комбайн менән урожай йыйнауға участканы әҙерләү, комбайн игенен ташыу, государствоға иген тапшырыу, арыш сәсеү өсөн баҫыуға арыш орлоғо ташыу, комбайндар урған майҙанда һалам һәм кәбәктәр йыйнау һәм башҡа эштәрҙе башҡара.

Трактор һәм баҫыусылыҡ эштәрен ярашлы бәйләп алып барыу өсөн баҫыу эштәрен дөрөҫ планлаштырырға, тракторҙарҙың участкаларҙан-участкаларға күсеү буйынса аныҡ графиген булдырырға, МТС машиналарын өлгөлө хеҙмәтләндерергә, йәнле тартыу көстәрен, инвентарҙарҙы һәм эшсе көстәрҙе тулы файҙаланырға кәрәк.

Баҫыу эштәрендә МТС машиналарын, шулай уҡ колхоздың йәнле тартыу һәм эшсе көстәрен юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланыу маҡсатында, трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларының эштәрен тығыҙ бәйләнешле итеп ойошторорға, ике бригада араһында төҙөлгән социалистик ярыш договоры был эштә нигеҙ булып ятырға тейеш.

И. Ҡудаяров,
ВКП(б) Өлкә Комитетының ауыл хужалығы бүлеге мөдире урынбаҫары.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Уҡраға ҡаршы планлы көрәш кәрәк

Уҡраға ҡаршы планлы көрәшеүҙе тәьмин итеү өсөн уның тураһында яҡшы белергә кәрәк.

Нәмә ул уҡра? Мөгөҙлө эре малдар өсөн ул ниндәй зарар килтерә һуң?

Уҡра — һыйырҙарҙың арҡа тиреһендә шешектәрҙә йәшәгән ҡорт. Был шешектәр, аҙағы ҡояш йылыта башлағас та, асыла башлайҙар. Шешек эсендә ятҡан, орсоҡ башы ҙурлығындағы, паразит (ҡорт) март айының урталарынан башлап йәнләнә һәм шешекте тишеп сыға һәм ергә төшә. Мал ни тиклем йоғошланған булһа, уҡралар унда шул тиклем күп була.

Уҡра мөгөҙлө эре малдарға ҙур зарар килтерә, һыйыр ябыға, һөтөн кәметә. Бындай һыйырҙан алынған тиренең иң ҡалын, ҡиммәтле өлөшө яраҡһыҙлана. Бындай һыйырҙы иткә һуйғанда, уның арҡа өлөшөндәге ите ашарға ярамай, ҡан һауған була.

Совет ғалимдарының һынауҙары буйынса, әгәр һыйырҙың арҡаһында 10 — 15 уҡра булһа, бындай һыйыр 10 — 12 процентҡа һөтөн кәметә. Шулай уҡ уҡра арҡаһында беҙҙең тире эшкәртеү промышленносебеҙ йыл һайын күп миллиондарса һум зарар күрә.

Һыйырҙың арҡа тиреһендә шешекте тишеп сыҡҡас, уҡра ергә төшә. Тупраҡта ул, ҡурсаҡ хәлендә ятып, йәнләнә һәм бөгәләк булып оса. Был — махсус һыйыр бөгәләге. Уны һыйыр күгәүене тип тә әйтәләр; Йәйге эҫе көндәрҙә бындай бөгәләктәр һыйыр көтөүҙәренән талмайҙар, улар янында осалар. Ғәҙәттә, бөгәләк һыйырҙың тубыҡ йөндәренә йәбешеүсән була. Бында ул һыйырҙың тубыҡ йөндәренә йәбештереп йомортҡа һала. Был йомортҡалар һаныҙ һеркәнән тора. Йөндәргә йәбешкән һеркәләр, 4 көн үҙгас, бәләкәй генә личинкаларға әйләнеп, тирегә баталар. Личинкалар, тире аҫты иттәре буйлап, һыйырҙың ҡыҙыл үңәсенә киләләр. Унан һуң, ҡыҙыл үңәстең ите буйлап, күкрәк шаршауына үтәләр. Уның буйлап юғарыға, һыйырҙың арҡаһына сығалар. Бында һыйыр кәүҙәһенең тынысыраҡ урыны — арҡа тиреһе аҫтында ҡышлайҙар. Шулай итеп, улар бөтә йыл буйынса һыйырҙарҙы яфалайҙар. Личинка үҙенең миграцияһы осорында һыйырҙың тиреһен яралап, нервыһын яңғырата, тынысһыҙлай. Үҙ юлында был паразит үҫә, ҙурая. Тимәк, ул һыйырҙың организмы иҫәбенә йәшәй.

Был биологик паразитҡа ҡаршы нисек көрәшергә һуң?

Иң әлек, апрель башынан башлап, һәр бер фермала һәм индивидуаль хужалыҡтарҙа бөтә һыйырҙарҙың, бигерәк тә таналарҙың һәм башмаҡтарҙың арҡаларын һыйпап ҡарарға, личинка ятҡан урынын табарға, бындай малдарҙы айырым иҫәпкә алырға кәрәк. Унан һуң, һәр бер 20 — 25 көндән һуң, үҫә башлаған уҡра, бармаҡтар менән ике яҡлап ҡыҫып, сығарыла һәм паразит бутылкаға йыйыла, яндырыла. Сөнки личинка ергә ташланһа, ул тупраҡта күмелеп ята ла, ҡурсаҡланып бер ни тиклем ятҡандан һуң, бөгәләккә әйләнә. Бындай бөгәләктең ғүмере оҙон түгел, 7 — 10 көнлөк кенә. Шунан һуң ул үлә. Ләкин ошо йәшәүе ваҡытында һәр бер ана бөгәләк һыйырҙың тубығына 400 — 500 йомортҡа һалып өлгөрә.

Һыйыр уҡраһының паразитен үлтереү өсөн хәҙер махсус дарыу ҡулланыла. Бының өсөн гексохлоран, ДДТ һәм КБЧ исемле дарыуҙарҙан иретмә йәки май яһала. Ул йоғошланған һыйырҙың арҡаһына һөртөлә. Бындай дарыуҙар һәр бер районға һәм колхозға план буйынса таратыла.

Һыйыр бөгәләктәре күренә башлағас, һыйырҙарҙы кис һәм таңда ғына көтөргә, ә көндөҙөн һалҡын һарайҙа тоторға тәҡдим ителә. Был сара зоогигиенала бик рациональ шарттарҙың береһе булып һанала. Был осорҙа һыйырҙың тубыҡ тиреһендәге йөндәрҙе ҡайсылау ҙа файҙалы. Былай эшләгәндә унда бөгәләк йомортҡалары йәбешә алмайҙар.

1951 йылда бөтә һыйыр малын уҡранан таҙартыу өсөн планлы саралар тулыһынса тормошҡа ашырылырға тейеш.

Ветеринар врач Һ. Юлдыбаев,
Башҡортостан Ветеринария ғилми-тикшеренеү тәжрибә станцияһының ғилми сотрудниге.

Был эш бөтмәгән әле

Был икәүҙән-икәү генә һөйләшеп килешеүгә өлгәшкән кешеләр — Башҡортостан республика махсус клиника больницаһының терапия бүлеге врачы К. И. Киселева һәм Күйөргәҙе районының Таймаҫ ауылынан килгән ике бала әсәһе Ғәрифә Усманова ине. Береһе взятка алыу маҡсатында, икенсеһе бала тыуҙырыуҙан ҡотолоу маҡсатында йәшерен аборт яһарға килешәләр һәм был Өфөлә клиника больницаһында эшләнә.

Ләкин беҙҙең илебеҙҙә әсә булыуҙың ҙур бәхетен аңларға теләмәгән әсәнең һәм кеше ғүмере иҫәбенә үҙенә өҫтәмә байлыҡ йыйыу артынан ҡыуған врач Киселеваның иҫәптәре ҡыйралыҡҡа осрай. Ҡараҡтарса эшләнгән аборт һөҙөмтәһендә әсә булыр кеше ҡаты ауырый һәм врач Киселева күңелһеҙ булып бөтөүе мөмкин булған үҙәре башлаған ошо эштә ситтә ҡотолоп ҡалыу өсөн тиҙ генә ашығыс ярҙам машинаһын саҡыртып, Усмановаға уйҙырма ауырыу күрһәтеп яҙылған ялған бюллетень биреп, уны акушер-гинекология клиника больницаһына оҙата. Һәм енәйәт эшләүгә килешкән кешеләр был юлы ла уртаҡ тел табалар: Усманова аборт яһау тураһында бер кәмгә, бер нәмә әйтмәҫкә тейеш, гинекология клиникаһынан сығыу менән ул яңынан Киселеваға килергә тейеш була, Киселева йәшерен юл менән дауалауҙы дауам иттереүгә йөкләмә ала.

Ләкин взятка алыу һәм бала яратмау нигеҙендә килеп тыуған был килешеү оҙаҡ йәшәмәй. Врач Киселева бынан һуң ауырыу турында ишетергә лә теләмәй, Усманованы дауалау өсөн яңынан больницаға ҡабул итеүҙән баш тарта, телефон аша «беҙҙең больницала уның эше бөткән инде» тип кенә яуап бирә. Врач Киселеваның был фекере менән килешеп булмай. Әле эш бөтмәгән, һуҙ суд органдарына бирелергә тейеш.

А. Хөрмәт.

КИРБЕС ЗАВОДЫ

Күйөргәҙе районы эреләтелгән «1 Пятилетка» колхозы члендәре быйыл стандарт типта кирбес заводы төҙөгәйнеләр. Завод бер йылда колхоз төҙөлештәре өсөн 70 мең кирбес эшләп сығарҙы. Быйыл кирбес эшләп сығарыу өс тапҡырға арттырыласаҡ.

Өфө ҡалаһы 3-сө номерлы мәктәптең тәбиғәт бүлмәһе бар. Һүрәттә (һулдан уңға): Уҡыу отличницалары Лариса Евдокимова һәм Релла Тайчинова тәбиғәт бүлмәһендә гөлдәр тәрбиәләйҙәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

ИРКЛЕ ОБЩЕСТВОЛАР ЭШЕ

Башҡорт АССР-ы армияға булышлыҡ итеү иркле обществоһының (ДОСАРМ) II конференцияһы булып үтте.

Конференцияла отчет докладын менән сығыш яһаусы ДОСАРМ-дың Башҡорт республикаһы комитете председателе иптәш Хәлимов общественный эшселәр ҡайһы бер уңышлыҡтарҙы күрһәтте.

— Һуңғы ике йыл эсендә, — тине докладсы, — партия ойошмаларының ярҙамында хәрби массовый эште йәйелдереү өсөн үткәрелгән күп кенә саралар беҙҙең обществола тәүге ойошмаларҙың һанын 291-гә арттырырға мөмкинлек бирҙе. Шул уҡ ваҡытта халыҡ араһында ДОСАРМ-дың маҡсатын һәм бурысын аңлатыу эше алып барыу юлы менән әлектән йәшән килгән тәүге ойошмаларҙың да сафтары киңәйтелде. Был өлкәлә Баҡалы, Баймаҡ, Бәләбәй, Дүртөйлө район ойошмалары айырыуса яҡшы эшләнеләр.

Ләкин ДОСАРМ-дың Башҡорт республика комитете уның район комитеттәренә тағыҙ аша ғына етәкселек итеү менән сикләнә. Райондарҙа республика комитетенең работниктәре бик һирәк булалар. Шул арҡала улар район комитеттәренең эшен күрмәйҙәр. Уларҙың ихтыяждарын белмәйҙәр һәм эште юлға һалыуҙа практик ярҙам күрһәтмәйҙәр.

Партияның урындағы ойошмалары ла ДОСАРМ-дың район комитеттәренең эше менән тейешенсә ҡыҙыҡһынмайҙар. Хатта ҡайһы бер райондарҙа улар өсөн айырым бүлмә лә булдырылмаған. Партия һәм комсомол ойошмаларының ярҙам күрһәтмәүҙәре арҡаһында күп кенә райондарҙа массовый эш бик йомшаҡ ҡуйылған һәм колхоз йәштәренең киң массаһы был обществоға аҙ ылыҡтырылған.

Массовый түңәрәктәрҙең эшен артабан йәйелдереү өсөн район комитеттәрендә материаль база етерлек түгел. Хәҙер күп кенә райондарҙа ат спорты буйынса түңәрәктәр төҙөлгән, ләкин был түңәрәктәр өсөн ҡулланма китаптар юҡ, шулай булғас улар эше эләктә. Ә республика комитете был ҡулланмаларҙы алдыра алмай. Түңәрәктәрҙең занятиеларын алып барыуҙа етәкселәр етешмәй, ә етәкселәрҙе әҙерләү эшендә тейешле ярҙам күрһәтелмәй. Республика комитетенең вәкилдәре бер генә түңәрәктең дә занятиеһында булғандары юҡ. Тимәк, улар занятиеларҙа булған етешһеҙлектәрҙе һәм унда ҡатнашыусыларҙың талаптарын белергә лә, төҙәтергә лә, практик ярҙам күрһәтергә лә теләмәйҙәр. Был етешһеҙлектәргә ДОСАРМ-дың Өфө ҡалаһы Киров район комитете председателе Хохлов, Күйөргәҙе район комитете председателе Сафиуллин, Аҫҡын район комитете председателе Клочихин иптәштәр айырыуса ныҡ туҡталдылар.

Мәкеев һәм Шахов иптәштәр республика комитете эргәһендәге лекция группаһы члендәренең обществоның тәүге ойошмаларында лекциялар, докладтар менән бик һирәк сығыш яһауҙарын күрһәттеләр.

Конференцияның делегаттары ДОСАРМ-дың эшен артабан яҡшыртыу өсөн республика комитете работниктәренә ҡағыҙ аша ғына етәкселек итеү стилен ташларға, урындарҙа йышыраҡ булырға, киң масса менән тығыҙ бәйләнеш булдырырға, район комитеттәренең эше менән ҡыҙыҡһынып, уларға эшлекле ярҙам күрһәтергә кәрәклеге тураһында әйттеләр.

Конференция ДОСАРМ-дың Башҡорт республика комитетенең яңы составын һайланы.

Республика комитетенең председателе итеп иптәш Хәлимов һайланды.

Ә. Бинишев.

Төҙөлөш бригадалары өсөн курс үткәрелде

Шаран. Күптән түгел районда эреләтелгән колхоздарҙың төҙөлөш бригадалары етәкселәре өсөн ике аҙналыҡ курс үткәрелде. Был курста төҙөлөш техниктәре Герасимов һәм Бойко иптәштәр бригадирҙарҙы төҙөлөш эштәренең элементарь ҡағиҙәләре һәм техникаһы менән таныштырҙылар.

Бынан башҡа район Советы эргәһендәге ауыл-колхоз төҙөлөше бүлеге мөдире иптәш Шәрәфетдинов «Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре» тигән һәм башҡа темаларға лекциялар һөйләне. Курста бөтәһе 18 кеше уҡыны.

И. Абдуллин.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 4 апрель. (ТАСС). Сит ил эштәре министрҙәре Советенең көн тәртибен әҙерләү өсөн саҡырылған дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының бөгөнгө кәңәшмәһендә СССР вәкиле Громыко председателлек итте.

Совет вәкиле өс держава делегацияһының 2 апрелдә индерелгән яңы тәҡдиме айҡанлы 2 апрелдә яһаған замечаниеләренә өҫтәмә рәүештә аңлатма бирҙе.

Өс державаның 2 апрелдә индергән тәҡдименең серьез етешһеҙлеге шунан тора, тине Громыко, дүрт державаның (СССР, АҠШ, Великобритания һәм Францияның) ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы мәсьәлә ғөмүмән ҡоралланыуҙы кәметеү тураһындағы мәсьәлә менән алмаштырыла. Совет делегацияһы, тап ошо дүрт державаның ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы тәҡдимгә ҡаршы килеү ҡоралды көстәрҙе кәметеүҙән баш тартыу менән бер, тип әйткәйне инде. Совет делегацияһы, сит ил эштәре министрҙәре Советенең сессияһында ғөмүмән ҡоралды көстәрҙе түгел, ә дүрт державаның ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы мәсьәлә тикшерелергә тейеш, тип иҫәпләй. Билдәле бит инде, бында һүҙ дүрт держава вәкилдәре ҡатнашлығында сит ил эштәре министрҙәре Советенең сессияһын саҡырыу тураһында бара. Дүрт держава министрҙәре нисек итеп барлыҡ илдәрҙең дә ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы мәсьәләне ҡарай алһындар. Шуға күрә беҙ, көн тәртибенең тейешле формулировкаһы менән ғөмүмән ҡоралды көстәрҙе кәметеү тураһында түгел, ә дүрт державаның ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советы тикшерергә һәм хәл итергә тейеш, тип иҫәпләйбеҙ.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ бөгөн индерә торған үҙебеҙҙең яңы формулировкабыҙҙа өс держава вәкилдәренең ҡайһы бер теләктәрен иҫәпкә алдыҡ. Көнбайыш держава вәкилдәре мөһим әһәмиәт биргән фекерҙәр, атап алғанда түбәндәге фекерҙәр беҙҙең тараптан иҫәпкә алынды: әлек беҙҙең тәҡдимебеҙҙә дүрт державаның ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы мәсьәләнә ҡарау айҡанлы йәшәп килгән ҡоралланыу кимәле тураһындағы мәсьәләне ҡарау хаҡында әйтелә ине. Хәҙер беҙ «айҡанлы» тигән һүҙҙе алып ташлайбыҙ һәм ике мәсьәләне әйтеп кенә үтәбеҙ. Шулай итеп, был яҡтан Совет тәҡдименә ҡаршы килергә мөмкин булмаясаҡ.

Беҙ шулай уҡ өс державаның 2 апрелдәге тәҡдимендәге ошондай етешһеҙлектәрҙе күрһәткәйнек, тине унан ары Громыко. Унда Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәлә аҙаҡҡы планға сигерелгән... ваҡытта был бик мөһим ... тәртибендә лайыҡлы урын... тейеш. Совет делегацияһы, демилитаризациялау тураһында... лә көн тәртибенең береһе... беренсе урынға урынлаштырыл... йеш, тип иҫәпләй.

Күрәһегеҙ, — тине Совет... беҙҙең һуңғы тәҡдимебеҙ өс... килдәре тарафынан әйтелгән... теләктәрҙе иҫәпкә алып әҙерлән...

Беҙ, тине Громыко, өс держава... дәре Совет делегацияһы тарафынан... индерелгән бик мөһим тәҡдим... ҙенлә һәм өс держава вәкилдәре... һим тәҡдимдәре нигеҙендә тө... ҙеп яңы текст менән килешергә... өмөттә белдерергә теләр инек.

Өс держава вәкилдәренең ... һуңғы тәҡдимдәрендә ҡуйылған... мәсьәләләргә килгәндә иһә, ... гацияһы төрлө ваҡыттарҙа ул... ләргә ҡағылып үткәйне һәм ... цияһы билдәле. Совет делегацияһы... лантик пакт һәм Американың ... ғы, Норвегиялағы, Исландиялағы... лай уҡ Европа менән Яҡын Көнсығыштағы... тып башҡа илдәрендәге хәрби ... тураһындағы мәсьәләне, шулай уҡ... бергә Триест тураһындағы ... көн тәртибенә индерелергә тейеш... иҫәпләй.

Көн тәртибе тураһындағы ... башҡа тәҡдимдәргә Совет делегацияһы... ның ниндәй әһәмиәт биреүен ... һәткәйнем инде, тине Громыко. ... легацияһы Атлантик пакт һәм ... ның хәрби базалары тураһындағы... ләне тикшереү кәрәклеге тураһында... тәҡдимен яҡлап дәлилдәр килтерә... Беҙ, был мәсьәлә серьез иғтибарға... булып тора, тип иҫәпләйбеҙ, сөнки... Европала, Европала ғына ла түгел... ара хәлдең буталсыҡ булыуы... тәренә туранан-тура ҡағыла...

Громыконың сығышынан һуң... рыш ябылды.

* * *

ПАРИЖ, 5 апрель. (ТАСС-тың хәбәрсеһе). Бөгөн СССР делегацияһы етәксеһе А. Громыко иртәнге ... торҙо. Унда Франция делегацияһы... был кәңәшмәләге етәксеһе Пароди... делегацияһының етәксеһе Джебб... Великобритания делегацияһының ... һе Дэвис һәм шулай уҡ ... булдылар.

Иртәнге аш ваҡытында кәңәшмәлә ... нашыусылар араһында официаль ... ған фекер алышыуҙар булды.

Ошо айҡанлы был көнгә билдәләнгән ... ултырыш кисектерелде.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 5 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 5 апрелдә, Халыҡ армияһы частәре Ҡытай добровольцтәре менән берлектә бөтә фронттарҙа ла дошманға ҡаршы, уның йәнле көсө һәм техникаһына ҙур юғалтыуҙар килтереп, ... лә һуғыштар алып барыуҙа дауам итә, тип хәбәр итте.

Көнбайыш Германияла һуғышҡа әҙерлек

БЕРЛИН, 5 апрель. (ТАСС). АДН агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, хәҙерге ваҡытта Боннда көнбайыш державаларҙың союзниктәр верховный комиссияһы экспертәре менән Аденауэр «хөкүмәте» вәкилдәре араһында Көнбайыш Германияла «сик буйы полицияһын» 10 мең кешенән 75 мең кешегә еткереп кәсәйтеү тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла.

«Сик буйы полицияһы» ... йәшеренгән был моторлаштырылған ... кәрҙ соединениеларҙе төҙәүҙе мәғәнә... лем тиҙерәк тормошҡа ашырырға ... төҙәлә. Көнбайыш Германияның ... яҡтарында хәҙер үк инде офицерҙарҙы ... һәм унтер-офицерҙарҙы әҙерләү ... алып барыла.

Вьетнам Халыҡ армияһының еңеүҙәре тураһында Ҡытай газетаһы

ШАНХАЙ. (ТАСС). Вьетнам Халыҡ армияһының күптән түгел Красная йылғаһы тамағы районында өлгәшкән уңыштарына арналған баш мәҡәләһендә «Сяньвэньжибао» газетаһы былай тип яҙа:

Вьетнам Халыҡ армияһының был еңеүҙәре ҙур әһәмиәткә эйә. Сөнки Красная йылғаһының буйы, бер яҡтан, Хайфонг-Ханой менән Лао-Кай райондары араһында үҙенә бер төрлө коридор булып тора, һәм, икенсе яҡтан, Төньяҡ Вьетнамда Француз ғәскәрҙәре ҡулында ... ған иң мөһим стратегик район ... Хәҙер Вьетнам халыҡ армияһының ... алып барыусы алдынғы частәре Ха... тан 20 километр ғына алыҫлыҡта ... лар. Халыҡ армияһының еңеүе һөҙ... лә Вьетнамдағы Француз империалистарының ... ғәскәрҙәре өсөн ҙур ҡурҡыныс ты...

Редактор F. F. ҒАФАР...

Бөгөн театрҙарҙа һәм киноларҙа

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — «ДУБРОВСКИЙ».
«Октябрҙә» — «ШТРАФ МАЙҘАНЫ».
«Салауатта» — «ЯЛАНДА».
Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «ЧАПАЕВ».

БЕЛДЕРЕҮ

Өфө тимер юлы Глуховская станцияһындағы МГБ санаторийһе төҙөлөшөнә инженерҙәр, техниктәр, прорабтар һәм десятниктәр, төҙөүселәр һәм ...никтәр, хеҙмәт һәм эш хаҡы буйынса инженерҙәр һәм техниктәр, ...тәр, нормировщиктәр, төҙөлөш механизмдәре һәм автомобиль эштәре буйынса механизаторҙар, механиктәр, таҡта ярыу, тимер эше һәм төрлө механизмдәре буйынса мастерҙәр, балта осталары, столярҙәр, шоферҙәр, ...тәр, дизелистәр, автослесарҙәр, автомеханиктәр, йорт төҙөү технорукы, ... төҙөлөш специальностәре булған эшселәр, төрлө эшселәр, өлкән бухгал...тер, уның ярҙамсыһы һәм бухгалтерҙәр талап ителә.

Эшкә ҡабул ителеүселәр торлаҡ майҙаны һәм коммуналь хеҙмәтләндереү менән тәьмин ителәләр.

Белешмәләр өсөн һәм хат менән түбәндәге адрес буйынса мөрәжәғәт итергә:

Өфө тимер юлының Глуховская станцияһы, МГБ-ның төҙөлөш бүлеге.
Өфө ҡалаһы Ленин урамы, 9-сы номерлы йорт, 7-се квартира. ... киске сәғәт 5-тән алып 7-гә тиклем.

АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ АЛДЫНҒЫЛАРЫНЫҢ ЭШ ӨЛГӨЛӘРЕН БӨТӘ КОЛХОЗДАРҒА ЕТКЕРӘЙЕК!

Партия Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын һәм тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу планын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә республикабыҙ колхоздарында яңы кадрҙар етештереләләр, алдынғыларҙың һаны көндән-көн үҫә һәм киңәйә бара. [illegible]

Алдынғыларҙың был тәжрибәләрен тәрән өйрәнеп башҡа бригадаларға һәм колхоздарға күсереү, уларҙы практик ҡулланыу, игенселектә хеҙмәт етештереүсәнлеген тағы ла күтәреү район ауыл хужалығы бүлектәренең, МТС-тарҙың, партия [illegible]

Баҡалы районы «Яҡты юл» колхозының техник культуралар үҫтереүсе звеноводы иптәш Мария Боярова королоҡло булған 1948 йылда картуфтың һәр гектарынан 250-шәр центнер, киндерҙең һәр гектарынан 6,5-әр центнер орлоҡ урожайы үҫтереп алды. Был тәжрибәләр башҡа колхоздарға күсерелергә тейеш ине. Ләкин район ауыл хужалығы бүлеге һәм уның агрономдары быны эшләмәнеләр. Һөҙөмтәлә хужалыҡ яғынан ҙур әһәмиәтле булған был тәжрибә онотолоп ҡалды, артабан үҫтерелмәне.

Оло Теләк районы Куйбышев исемендәге колхоз 1949 йылда 150 гектар клевер сәсеүлегенең һәр гектарынан уртаса 2,8-әр центнер, шул иҫәптән, 26 гектарҙың һәр береһенән 4,8-әр центнер, 6 гектарҙың һәр береһенән 5,5-әр центнер орлоҡ урожайы алды. Был колхоздың новаторҙары 1950 йылда ла клевер буйынса юғары урожай үҫтерҙеләр. Ләкин, шуныһы ғәжәп, Оло Теләк районы етәкселәре һәм агрономдары был колхоздың эш тәжрибәләрен клевер үҫтереүсе башҡа колхоздарға күсереү сараларын күрмәйҙәр. Шуға күрә Оло Теләк районы 1950 йылда клевер орлоғонан урожай алыу планын үтәмәне.

Республикабыҙҙа колхоздарҙы эреләтеү уңайы менән, уларҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу бурысы килеп баҫҡан хәҙерге ваҡытта, совет фәне ҡаҙаныштарын һәм алдынғы тәжрибәләрҙе производствоға индереү эше бик ҙур роль уйнай. Район ауыл хужалығы бүлектәренең һәм МТС-тарҙың специалистәре алдынғы тәжрибәләрҙе эреләтелгән колхоздарҙың хужалыҡ тармаҡтарына ижади индереүҙе яҡшы ойоштора алалар һәм ойошторорға тейештәр ҙә. Сөнки эреләтелгән колхоздарҙа был сараларҙы киң ҡулланыу өсөн мөмкинлектәр бик ҙур.

Алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалау ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Партия һәм хөкүмәтебеҙ был эшкә айырыуса ҙур иғтибар бирәләр. Республика Ауыл хужалығы министерствоһында пропаганда управлениеһының ойошторолоуы быны асыҡ күрһәтә. Ләкин фән ҡаҙаныштарын һәм алдынғы тәжрибәләрҙе массалаштырыуҙы тик пропаганда юлы менән генә алып барыу маҡсатҡа өлгәшеүҙе тәьмин итеп еткерә алмай. Шуға күрә район ауыл хужалығы бүлектәренең һәм МТС-тарҙың агрономдары, зоотехниктәре, агролесомелиораторҙары, механиктәре колхоздар өсөн 1951 йылға төҙөлгән планда алдынғы тәжрибәләрҙе производствоға мотлаҡ индереүҙе ҡарарға тейештәр. Был өлкәлә Бүздәк район ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы иптәш Исланов эше өлгө булып тора ала. Бында, мәҫәлән, люцернаны орлоҡ өсөн йәй сәсеүҙең әһәмиәтен тәжрибәләрҙә һынап ҡарағас, районда был сара хөкүмәт планы тәртибендә колхоздарға еткерелде.

Социалистик ауыл хужалығын артабан күтәреү өсөн карашта игенселек һәм малсылыҡ алдынғылары колхозда әлегәсә бик күп резервтар файҙаланылмауын асыҡ күрһәтәләр. Совет фәне ҡаҙаныштарын һәм алдынғы тәжрибәләрҙе колхоздар һәм совхоздар производствоһына киңерәк индереү — хәҙер бөтә общественностең бик мөһим эше.

А. Әхмәров,
Башҡортостан баҫыусылыҡ ғилми-тикшеренеү станцияһының ғилми сотрудниге.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49 хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02426 Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.
1951 йыл
№ 69 (8786)
8 АПРЕЛЬ
йәкшәмбе
Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Куйбышев өлкәһе нефть промышленносе эшселәренән, мастерҙәренән, инженерҙәренән, техниктәренән, ғилми работниктәренән һәм хеҙмәткәрҙәренән.
ССР Союзы Министрҙар Советы Председателе иптәш Иосиф Виссарионович Сталингә (1-се бит).
ПРОМЫШЛЕННОСТЬ ҺӘМ ТРАНСПОРТ АГИТАТОРҘАРЫНЫҢ РЕСПУБЛИКА КӘҢӘШМӘҺЕ (2-се бит).
ҺАЛ АҒЫҘЫУ — ГОСУДАРСТВО ӘҺӘМИӘТЕНДӘГЕ МӘҺИМ ЭШ. Н. Ртищев.— Үткән йылғы хаталарҙы ҡабатламаҫҡа (3-сө бит).
Х. Бәдретдинов. — Яман йылғала навигацияға әҙерлек насар (3-сө бит).
В. Митюгов. — Һал ағыҙыу эшен срогынан алда тамамлау өсөн (3-сө бит).
АУЫЛ СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛДӘРЕ ТРИБУНАҺЫ. В. Кулаков. — Общественный малсылыҡты үҫтереү өсөн көрәштә ауыл Советы (3-сө бит).
РЕДАКЦИЯҒА ХАТ. Б. Ишкилдин. — Кинокартиналар регуляр күрһәтелмәй (3-сө бит).
К. Абдуллин. — Бәләбәй районында (4-се бит).
Ю. Звягин. — Халыҡ-ара күҙәтеү (4-се бит).
Бонн хөкүмәтенең террористик саралары айҡанлы Германия коммунистар партияһының белдереүе (4-се бит).
Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Һал ағыҙыуҙы ҡыҫҡа срокта һәм юғалтыуһыҙ үткәрергә

Һал ағыҙыу эше — ағас әҙерләү кампанияһының иң яуаплы һәм хәл иткес осоро ул. Бөтә сезон буйынса колхозсыларҙың, даими урман эшселәренең фиҙакәр хеҙмәттәре менән әҙерләнгән күп һандағы ағас был осорҙа һыу менән ағыҙылып затондарға килтерелә, һалланып пристандарға, төҙөлөш урындарына оҙатыла.

Быйылғы сезондың һал ағыҙыу кампанияһы айырыуса мөһим һәм яуаплы. Быйыл задание үткән йылға ҡарағанда күп артыҡ. Ул бер миллион кубометрҙан ашып китә. Әҙерләнгән ағастарҙың ҙур ғына өлөшө коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре өсөн ебәреләләр. Был һал ағыҙыусылар өсөн ҙур ғорурлыҡ.

Республикабыҙҙың бөтә хужалыҡ тармаҡтарында хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара солидарлыҡ көнө — Беренсе Май хөрмәтенә социалистик ярыш йәйелдерелде. Леспромхоздар, һал ағыҙыу конторалары коллективтәре был маҡтаулы ярышҡа ҡушылып, шулай уҡ үҙҙәренә бик мөһим һәм конкрет йөкләмәләр алдылар. Ҡыуғынды, һал ағыҙыуҙы ҡыҫҡа срокта һәм һис бер юғалтыуһыҙ үткәреү был маҡтаулы ярыштың йөкмәткеһе булып тора. Ҡыуғынсылар, һалсылар быйылғы сезонды — коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре навигацияһы тип ҙур ғорурлыҡ менән атайҙар.

Быйыл яҙ иртә һәм берҙәм килде. Күп кенә урындарҙа һал ағыҙыу конторалары ваҡ йылғаларҙа навигацияны башлап ебәрҙеләр. Үҙән, Ҡаға, Ҡана һыуҙарына күп кенә ағас төшөрөлдө лә инде.

Уразбахты һал ағыҙыу контораһы навигацияны яҡшы әҙерлек менән ҡаршыланы һәм был коллективҡа ҡыуғынды, һал ағыҙыуҙы ҡыҫҡа срокта һәм уңышлы башҡарыу өсөн ҙур мөмкинлек тыуҙырҙы. Бында эшселәр өсөн дәйем ятаҡтар төҙөп ҡуйылған, азыҡ-түлек, промышленность тауарҙары базаларға етерлек һанда килтерелгәндәр. Контора етәкселәре ағастарҙы ярҙан һыуға төшөреүҙә, һаллауҙа механизмдарҙы киң файҙаланалар.

Навигация — сезонлы эш. Шуның өсөн республикабыҙҙың леспромхоздары, һал ағыҙыу конторалары етәкселәре, бөтә һалсылар, ҡыуғынсылар уны уңышлы үткәреү өсөн ҙур активлыҡ менән эшләргә бурыслылар. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп кенә урындарҙа әҙерлек эштәрендә бик ҙур етешһеҙлектәр йәшәй әле.

Шул айҡанлы һал ағыҙыу конторалары, леспромхоз коллективтәренең үткән йылғы хаталары тураһында иҫкә төшөрөп китеү урынһыҙ булмаҫ. Үҙған йыл Баҡанибольск, Таныш, Яман йылға, Архангельск һәм башҡа леспромхоздар, һал ағыҙыу конторалары навигацияның срогын һуҙҙылар, йылғаға төшөрөлгән ағастарҙы тиҙ арала затондарға, пристандарға илтеп еткереү сараһын күрмәнеләр. Шул арҡала күп меңдәрсә кубометр ағас юғалып ҡалды һәм государствоға бик ҙур зыян килтерелде.

«Башлесосплав» тресы, леспромхоз, һал ағыҙыу конторалары работниктәре, район партия, совет ойошмалары быйыл үткән йылғы хаталарҙан үҙҙәренә тейешле һығымта яһарға һәм уларҙың ҡабатланыуына юл ҡуймаҫҡа тейеш инеләр. Ләкин, күп кенә урында эш һаман да үҙ ағышына тапшырылған хәлдә ҡалыуҙа дауам итә. Бына ошондай факт. Быйылғы навигацияла бик ҙур урын алып тороусы Ағиҙел һал ағыҙыу конторалында әҙерлек эштәре бөгөнгә тиклем тамамланмаған. Бында кәмәләр, бағорҙар етешмәй. 15 мең кубометрҙан артыҡ ағас ҡабул итеп алынмаған да. Был контора быйыл беренсе башлап Ләмәҙе йылғаһының үрге ағымында ҡыуғын үткәрә. Ләкин был яңы урында бер ниндәй мелиоратив саралар эшләнмәгән.

Таныш, Яман йылға, Нуриман һәм башҡа леспромхоздарҙың етәкселәре шулай уҡ һал ағыҙыу эшендә бөрөлә алмаусылыҡ күрһәтәләр. Нуриман леспромхозында эшселәр тәьминатенә иғтибар итмәйҙәр. Тәьминат бүлеге (начальниге иптәш Чирков) һалсылар өсөн кәрәкле тауарҙарҙы алдан ташып ҡуйыуҙы ойоштормаған.

1951 йылдың навигацияһы уҙған йылдарҙан бик ныҡ айырыла. Быйыл яҙ бик иртә һәм берҙәм килде. Тиҙҙән бөтә урында боҙ китеү һәм һыуҙың кинәт артыуы көтөлә. Шуға күрә һалсылар коллективтәре йылғаларҙың ташҡын көсөн үҙ ваҡытында файҙаланып ҡалыуға өлгөрөргә тейештәр. Навигация эшендә һәр төрлө һуҙыуҙар, ҡуҙғала алмаусылыҡтар зарарлы һәм һәләкәтле ваҡиға булып тора. Шуға күрә ундай күренештәргә үҙ ваҡытында ҡырҡа сик ҡуйылырға тейеш.

Техника хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә һәм кешенең хеҙмәтен еңеләйтеүҙә төп средство. Навигация осоронда механизмдарҙы киң файҙаланыуға айырыуса әһәмиәт бирелергә тейеш. Һаллау машиналары, бульдозорҙар, судолар бөтәһе лә эшкә ҡушылһын. Йылғаларҙағы ҡурҡыныслы урындарҙы хәҙерҙән үк билдәләргә һәм уларҙы кәртәләп алырға, йырындарға пикеттәр ҡуйырға кәрәк.

Навигацияны үткәреүгә леспромхоздарҙың даими эшселәре менән бергә, күп кенә һанда колхозсылар ҙа ылыҡтырылалар. Республикабыҙҙың райондары быйыл һал ағыҙыу һәм ҡыуғынға күп кенә эшсе көстәре бүлергә тейештәр. Ләкин был бурысты үтәү һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел әле. Оло Теләк, Федоровка, Помаруҙа, Нуриман, Матрай һәм башҡа бик күп кенә райондар бөгөнгә тиклем участкаларға бер генә лә эшсе ебәрмәгәндәр. ВКП(б) райкомдары һәм район Советы исполкомдары эшсе көстәре бүлеү буйынса билдәләнгән задаһиеһен үтәлеүен һис шикһеҙ тәьмин итергә бурыслылар.

Яҙ үҙенен тулы хоҡуғында. Бына бөгөн-иртәгә йылғалар ташып боҙҙар китәсәк. Быйылғы йылдың үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, навигацияны уңышлы үтәү өсөн бөтә көс тупланырға тейеш. Ҡыуғынсылар, һалсылар араһында социалистик ярышты, агит-массовый эште киң йәйелдереп, уларҙың иждаи көсөн коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре башланыу йылы навигацияһын уңышлы үткәреүгә тупларға кәрәк. Һал ағыҙыу кампанияһы государство әһәмиәтендәге мөһим эш. Уны ойошҡан рәүештә һәм һис бер төрлө юғалтыуһыҙ үткәреү өсөн көрәш — һәр бер урман эшсеһенең, инженер-техник работниктең, партия, профсоюз ойошмалары етәкселәренең намыҫ бурысы ул.

Куйбышев өлкәһе нефть промышленносе эшселәренән, мастерҙәренән, инженерҙәренән, техниктәренән, ғилми работниктәренән һәм хеҙмәткәрҙәренән

МӘСКӘҮ, КРЕМЛЬ

ССР Союзы Министрҙар Советы Председателе иптәш Иосиф Виссарионович СТАЛИНГӘ

Ҡәҙерле Иосиф Виссарионович!

Беҙ, Куйбышев өлкәһе нефть промышленносеның эшселәре, мастерҙәре, инженерҙәре, техниктәре, ғилми работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре, һеҙгә, совет халкының һәм бөтә прогрессив кешелектең гениаль юлбашсыһы һәм учителенә, ысын йөрәктән сыҡҡан ялҡынлы сәләм ебәрәбеҙ һәм оҙаҡ йылдарға һаулыҡ теләйбеҙ.

Совет халкы Ленин — Сталин партияһының һыналған етәкселегендә беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөү тураһында һеҙҙең тарихи күрһәтмәләрегеҙҙе үтәүҙә ҙур еңеүҙәргә өлгәште. Һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡ план срогынан алда үтәлде. Волгала, Днепрҙа һәм Аму-Дарьяла коммунизмдең гигант төҙөлештәрен ҡороу башланды, судолар йөрөй торған Волга-Дон каналын төҙөү тамамлана.

Халыҡ хужалығының ҡеүәтле үҫеше нигеҙендә илебеҙ хеҙмәтсәндәренең материаль көн-күреше йылдан-йыл тайпылышһыҙ яҡшыра бара. Беҙ аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына государствоның ваҡлап һатыу хаҡтарын яңынан — иҫәп буйынса дүртенсе тапҡыр арзанайтыу тураһында Партия һәм Хөкүмәт ҡарарын тәрән ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршыланыҡ.

«Правда» хәбәрсеһе менән бәседәлә һеҙ, иптәш Сталин, бөтә донъя общественносе фекерен тулҡынландырыусы төп тышҡы политик мәсьәләләргә тулы һәм асыҡ яуаптар бирҙегеҙ. Англия-Америка һуғыш тоҡандырыусыларының енәйәтсел махинацияларын фаш иттегеҙ, тыныслыҡ өсөн артабанғы көрәш программаһын билдәләнегеҙ һәм һуғыштың котолғоһоҙ булып торманыуына, ныҡлы һәм даими көрәш менән ныҡлы һәм оҙаҡҡа һуҙылған тыныслыҡты яулап алыу мөмкинлеге [illegible]

[illegible] СССР Верховный Советының икенсе сессияһы тарафынан ҡабул ителгән тыныслыҡты яҡлау тураһындағы Законын беҙ бөтә совет халкы менән бергә, бер кеше кеүек хупланыҡ.

[illegible]

[illegible] планды һәм 1950 йылғы планды срогынан алда үтәүҙәре тураһында һеҙгә, Иосиф Виссарионович, белдереүебеҙ менән шатбыҙ.

Куйбышев өлкәһендә нефть сығарыу 1950 йылда, 1946 йылға сағыштырғанда, 2,6 тапҡырға, газ сығарыу — 1,5 тапҡырҙан ашыуыраҡҡа һәм нефть скважиналарын бораулау 4 тапҡырҙан ашыуыраҡҡа артты. Нефть эшкәртеү 2,8 тапҡырға артты. Биш йыллыҡ йылдарында нефть һәм газ промыслалары һәм заводтары государствоға пландан тыш 53,8 миллион һумлыҡ накопление бирҙеләр.

Нефть промышленносенда үтәлгән төҙөлөш-монтаж эштәренең күләме 1950 йылда, 1946 йылға сағыштырғанда, 6 тапҡырға артты.

Үткән биш йыл эсендә 200 мең квадрат метр яңы торлаҡ майҙаны төҙөлдө һәм эксплуатацияға индерелде, 97 культура һәм көн-күреш учреждениеһе төҙөлдө һәм эксплуатацияға тапшырылды.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында беҙҙең өлкәлә күп кенә нефть һәм газ ятҡылыҡтары асылды.

1950 йылда, 1949 йылға ҡарағанда, нефть 19 процентҡа, газ — 9,3 процентҡа артығыраҡ сығарылды, нефть 76 процентҡа күберәк эшкәртелде, үтәлгән бораулау эштәре күләме 33 процентҡа һәм төҙөлөш-монтаж эштәре күләме 70,8 процентҡа артты.

Ләкин беҙ өлгәшелгәндәр менән тынысланып ҡала алмайбыҙ. Үҙебеҙҙең эшебеҙҙәге етешһеҙлектәрҙе асыу һәм бөтәреү иң мөһим бурыстарҙың береһе булып тороуын, большевистик тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе йәйелдермәй торып, алға табан хәрәкәт итеүҙең булмауы, үҫештең булмауы тураһында һеҙҙең күрһәтмәләрегеҙҙе беҙ һәр ваҡыт хәтерҙә тотабыҙ.

Беҙ һәр бер предприятиеның, аныҡ, ритмле эшләүенә, производствоның һәм эш урынының юғары культураһына, яңы техниканы һәм хеҙмәтте ойоштороуҙың алдынғы методтарын индереүгә өлгәшмәнек әле. Беҙҙә государство планын үтәмәүсе, экономия һәм хужалыҡ иҫәбен индереү өсөн тейешенсә көрәш алып бармаған предприятиелар ҙа бар әле.

1951 йылда беҙ булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн, бораулау һәм нефть сығарыу планларын, нефть продукттарын эшләү, промышленность ҡоролмаларын, торлаҡ йорттарын һәм культура көн-күреш [illegible]

[illegible]

„Куйбышевнефть" берекмәһенең предприятиеләре буйынса

1. 1951 йылғы планды арттырып үтәргә һәм 1950 йылға ҡарағанда нефть сығарыуҙы 18,5 процентҡа арттырырға, планда тыш 35 мең тонна нефть бирергә.

2. Эксплуатацион һәм разведка бораулауы буйынса 1951 йылғы государство планын срогынан алда үтәргә.

1951 йылда проходканың дәйем планының 60 процентын турбина ысулы менән бораулауға.

3. Төп нефть ятҡылыҡтарында ике стволлы һәм ике стволлы-юнәлдерелгән кустовой бораулауҙың яңы методын индерергә.

4. 1951 йылда өс яңы нефть ятҡылығын асырға һәм нефть биреүсе яңы ете майҙанда тәрән разведкаларға.

5. Нефть сығарыу буйынса хеҙмәт етештереүсәнлеген планға ҡарағанда 2 процентҡа күтәрергә.

6. Скважиналарҙы бораулау һәм нефть сығарыу буйынса бөтә бригадаларҙы хужалыҡ иҫәбенә күсереп, бер тонна нефтең үҙенә төшөү хаҡын планға ҡарағанда бер процентҡа арзанайтырға.

7. Төҙөлөш-монтаж эштәренең йыллыҡ программаһын хужалыҡ ысулы менән 1951 йылдың 21 декабренә, подрядтар тәртибе планын 1951 йылдың 1 декабренә үтәргә.

8. 1951 йылда 2 мең 670 нефтсене әҙерләргә һәм квалификацияһын күтәрергә.

9. Рационализаторлыҡ һәм уйлап табыу тәҡдимдәрен индереүҙән 1951 йылда 6 миллион һум экономия алырға.

„Куйбышевгаз" трестының предприятиеләре буйынса

1. Газ сығарыу буйынса планды срогынан алда, 25 декабргә һәм бораулау эштәре планын 5 декабргә үтәргә.

2. Ҡором етештереү буйынса планды срогынан алда, 28 декабргә үтәргә.

3. Газ сығарыуҙың үҙенә төшөү хаҡын планға ҡарағанда 3 процентҡа һәм ҡором етештереүҙең үҙенә төшөү хаҡын бер процентҡа арзанайтырға.

4. 1951 йылда ике газ ятҡылығын эксплуатацияға индерергә, 2 яңы майҙанда тәрән разведка бораулауын башларға һәм яңы газ ятҡылығын асырға.

Нефть эшкәртеү заводтары буйынса

1. Нефть эшкәртеү буйынса государство планын срогынан алда, 1951 йылдың 21 декабренә үтәргә.

Тоноҡ нефть продукттарын етештереү буйынса планды 1,5 процентҡа арттырып үтәргә һәм сырьенан тоноҡ нефть продукттарын алыуҙы 1951 йылдың планына ҡарағанда 1,5 процентҡа тәрәнәйтергә.

2. Хеҙмәт етештереүсәнлеген 1951 йылдың планына ҡарағанда 3 процентҡа күтәрергә.

3. Сырьеның һәм нефть продукттарының производствола юғалыуын план нормаларына ҡарағанда бер процентҡа кәметергә.

4. План нормаларына ҡарағанда, 0,5 процент яғыулыҡҡа, 3 процент электр энергияһына һәм 3,5 процент реагенттәргә экономия яһарға.

5. Нефть эшкәртеүҙең яңы технологик процестарын үҙләштерергә һәм яңы сортлы нефть продукттарын етештерә башларға.

6. Нефть продукттарының үҙенә төшөү хаҡын планға ҡарағанда 1 процентҡа кәметергә, планда тыш 3 миллион һумлыҡ табыш бирергә.

7. 800 эшсене әҙерләргә һәм ҡайтанан әҙерләүҙе үткәрергә.

Төҙөлөш ойошмалары буйынса

1. Төҙөлөш-монтаж эштәренең йыллыҡ планын 21 декабргә үтәргә һәм бөтә промышленность объекттарын хөкүмәт тарафынан билдәләнелгән сроктарҙа эксплуатацияға тапшырырға.

2. Торлаҡтар һәм культура көн-күреш объекттарын төҙөүҙең йыллыҡ планын срогынан алда, 21 декабргә үтәргә. 1951 йылда 74.800 квадрат метр яңы торлаҡ майҙанын һәм 29 культура көн-күреш учреждениеһын эксплуатацияға тапшырырға.

3. Машиналарҙы, механизмдарҙы һәм оборудованиеларҙы тулыһынса файҙаланыуға, уларҙы файҙаланыуҙың [illegible] прогрессив нормаларын [illegible]

4. Промышленность предприятиеларенең [illegible]

5. Эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеген 1951 йылда йыллыҡ планына ҡарағанда төҙөлөш-монтаж эштәрендә 3 процентҡа һәм промышленность предприятиеларында 8,9 процентҡа үҫеүен тәьмин итергә.

6. Төҙөлөш-монтаж эштәренең үҙенә төшөү хаҡын планға ҡарағанда бер процентҡа һәм промышленность продукцияһының үҙенә төшөү хаҡын 4,7 процентҡа арзанайтырға.

[illegible] коллектив стахановсы эшкә күсеүе буйынса эштәрҙе киң йәйелдерергә йөкләмә алабыҙ.

1951 йылда «Ставропольнефть» тресының бөтә нефть промыслаларының һәм предприятиеларенең, нефть эшкәртеү заводтарының һәм нефть промышленносеның башҡа предприятиеларенең коллектив стахановсы хеҙмәткә күсеүенә өлгәшәсәкбеҙ.

1951 йыл эсендә беҙ завод, промысла һәм бораулау оборудованиеһен, металл ҡырҡыусы станоктарҙы, төҙөлөш механизмдарын, транспорт средстволарын һәм энергетик оборудованиены социалистик һаклыҡҡа алырға йөкләмә алабыҙ.

Илебеҙҙә коммунизмдең гигант төҙөлештәрен ҡороу буйынса йәйелдерелгән эштәр айҡанлы бөтә совет халкының иждаи күтәренкелеге менән рухланған килеш, беҙ, нефтселәр, донъялағы иң ҙур Куйбышев гидроэлектростанцияһын төҙөргә бөтә төр ярҙамды күрһәтергә йөкләмә алабыҙ.

Беҙ ауыл хужалығы эштәрен уңышлы үтәү һәм социалистик баҫыуҙарҙы һуғарыуҙы тәрмоҡҡа ашырыу буйынса Куйбышев өлкәһенең колхоздарына һәм МТС-тарына шефлыҡ ярҙамын көсәйтергә йөкләмә алабыҙ.

Большевиктар партияһы, ҡәҙерле Иосиф Виссарионович, һеҙҙең тарафтан рухландырылып, беҙ бөтә совет халкы менән бергә, коммунистик төҙөлөш уңыштарын ныҡышмалы һәм фиҙакәр рәүештә арттырасаҡбыҙ, бөтә донъялағы тыныслыҡтың ышаныслы терәге — беҙҙең һөйөклө социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен нығытасаҡбыҙ.

Беҙ һеҙҙе, ҡәҙерле Иосиф Виссарионович, алынған социалистик йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәйәсәгебеҙгә ышандырабыҙ.

Йәшәһен совет халкының бөтә еңеүҙәрен рухландырыусы һәм ойоштороусы — Ленин — Сталин партияһы!

Йәшәһен беҙҙең бөйөк социалистик Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең бөйөк юлбашсыбыҙ һәм учителебеҙ иптәш **Сталин!**

Куйбышев өлкәһе нефть промышленносе эшселәренең, мастерҙәренең, инженерҙәренең, техниктәренең, ғилми работниктәренең һәм хеҙмәткәрҙәренең йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында

1951 йылда орлоҡтарҙы яровойлаштырыу тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ошоларҙы билдәләй: орлоҡтарҙы яровойлаштырыуҙың урожайҙы күтәреү эшендә ҙур эффектлы сара булыуына ҡарамаҫтан, күп кенә райондарҙың район Советтәре исполкомдары, район ауыл хужалығы бүлектәре һәм МТС-тары тарафынан был бик мөһим сараға етерлек тиклем иғтибар бирелмәй. Шуның һөҙөмтәһендә 1950 йылда бөртөклө ашлыҡ культураларының орлоҡтарын яровойлаштырыу планы үтәлмәй ҡалды.

Бәләбәй, Воскресен, Дыуан, Зиянчура, Илеш һәм Күгәрсен райондары колхоздарында яровойлаштырыу планы бары тик 6 — 13 процентҡа ғына үтәлде.

Быйыл да Ҡариҙел, Бөҙәй, Белоҡатай һәм башҡа күп кенә райондарҙың колхоздарында орлоҡтарҙы яровойлаштырыуға әҙерлек эше һис тә ҡәнәғәтләнерлек ҡуйылмаған.

1951 йылға ауыл хужалығы эштәренең государство планы менән билдәләнгәнсә орлоҡтарҙы яровойлаштырыу планының һис шикһеҙ үтәлеүен тәьмин итеү маҡсатында, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы түбәндәге ҡарарҙы ҡабул итте:

1. Район Советтәре исполкомдарының председателдәрен, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәрен һәм МТС директорҙарын ошоларҙы эшләргә мәжбүр итергә:

а) биш көн срок эсендә яровизаторсыларҙар өсөн инструктаж үткәрергә, колхоздарҙың береһендә бөртөклө ашлыҡ культуралары һәм картоф орлоғон яровойлаштырыу эшен практик рәүештә күрһәтеүҙе ойошторорға; һәр бер баҫыусылыҡ бригадаһы өсөн берәр яровизатор булдырыу иҫәбенән сығып эш итергә;

б) һәр бер колхозда кәрәкле биналарҙы әҙерләүҙе, термометр һәм яровойлаштырыу өсөн кәрәкле башҡа инвентарҙы алыуҙы тәьмин итергә; колхоздарға орлоҡтарҙы ағыулау өсөн кәрәкле ағыу-химикаттар килтереүҙе һәм уларҙы орлоҡ ағыулау буйынса булған инструкцияға ярашлы рәүештә файҙаланыуҙы тәьмин итергә;

в) эштәрҙе ойоштороу өсөн һәм орлоҡтарҙы яровойлаштырыуға етәкселек итеү өсөн һәр бер агрономға бер төркөм колхозды беркетергә, яровойлаштырыу планының үтәлеүе һәм яҡшы сифатлы булыуы өсөн персональ яуаплылыҡты уларға йөкмәтергә;

г) орлоҡ яровойлаштырыуҙы яҡшы сифатлы итеп үткәреү һәм яровойлаштырылған орлоҡтар сәсеү өсөн яуаплылыҡты: район буйынса район ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономына, ә МТС ҡарамағындағы зоналар буйынса — МТС-тарҙың өлкән агрономдарына йөкмәтергә.

2. Район Советтәре исполкомдарының председателдәрен колхоздарҙа һәр бер культура өсөн орлоҡ яровойлаштырыу планын иң яҡшы агротехник сроктарҙа үтәүҙе, һәр бер колхоздың тупраҡ-климат үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эш итергә мәжбүр итергә.

„Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн" халыҡ-ара сталинса премия комитетында

5 һәм 6 апрелдә Мәскәүҙә академик Д. В. Скобельцын председателлегендә «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара сталинса премия комитетының ултырышы булды.

Иосиф Виссарионович Сталингә 70 йәш тулыу айҡанлы 1949 йылдың 20 декабрендә СССР Верховный Советы Президиумының Указы менән «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» булдырылған халыҡ-ара сталинса премиялар донъялағы теләһә ниндәй илдең граждандарына, уларҙың политик, дини һәм раса айырмалыҡтарына ҡарамаҫтан, тыныслыҡты нығытыу өсөн көрәш эшендә күренекле хеҙмәттәре өсөн йыл һайын 5 — 10 премия — «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара сталинса премия комитеты тарафынан билдәләнелә.

Халыҡ-ара сталинса премия менән наградланған кешеләр халыҡ-ара сталинса премия лауреаты дипломын, И. В. Сталин рәсеме төшөрөлгән, күкрәккә ҡуя торған алтын медаль һәм 100 мең һум күләмендә аҡсалата премия алалар.

Халыҡ-ара сталинса премия комитетының ултырыштарында Комитет Председателе академик Д. В. Скобельцын, председателдең урынбаҫарҙары — Ҡытай фәндәр академияһының президенты Го Мо-Жо һәм яҙыусы Луи Арагон (Франция), комитет члендары — Лондон университетының профессоры Джон Бернал (Англия), шағир Пабло Неруда (Чили), Лодзь университетының профессоры Ян Дембовский (Польша), яҙыусы Бернгардт Келлерман (Германия), академик Михаил Садовяну (Румыния), совет яҙыусылары А. А. Фадеев һәм И. Г. Эренбург ҡатнашты.

Комитет үҙенең ултырыштарында 1950 йыл өсөн халыҡ-ара сталинса премияларҙы тапшырыу тураһында килгән тәҡдимдәрҙе ҡараны һәм был мәсьәлә буйынса ҡарар ҡабул итте.

Түбәндә 1950 йыл өсөн «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара сталинса премиялар биреү тураһында комитеттың ҡарары иғлан ителә.

1950 йыл өсөн „Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн" халыҡ-ара сталинса премиялар биреү тураһында

„Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн" халыҡ-ара сталинса премиялар комитетының 1951 йыл 6 апрель ҡарары

Тыныслыҡты һаҡлау һәм нығытыу өсөн көрәш эшендә күренекле хеҙмәттәре өсөн донъялағы төрлө илдәрҙең демократик көстәренең түбәндәге вәкилдәренә «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара сталинса премиялар бирергә:

1. **Жолио-Кюри Фредерикҡа** — Коллеж де Франс профессоры, Франция фәндәр академияһының члены.
2. **Сун Цзин-Лингә** — Ҡытай халыҡ ярҙамы ассоциацияһы председателе.
3. **Джонсон Хьюлеттҡа** — Кентербери соборының настоятеле (Англия).
4. **Коттон Эжениға** — Францияның Тәньяғында Эколь Нормальдең (юғары нормаль мәктәп) почетлы директоры.
5. **Моултон Артурға** — Протестан Эпископ (АҠШ).
6. **Пак Денайға** — Корея ҡатын-ҡыҙҙарының демократик союзы председателе.
7. **Хара Эрибертоға** — министр (Мексика).

Комитет председателе
Д. В. СКОБЕЛЬЦЫН.

Комитет председателенең урынбаҫарҙары
ГО МО-ЖО (Ҡытай).
ЛУИ АРАГОН (Франция)

Комитет члендары:
ДЖОН БЕРНАЛ (Англия)
ПАБЛО НЕРУДА (Чили)
ЯН ДЕМБОВСКИЙ (Польша)
БЕРНГАРДТ КЕЛЛЕРМАН (Германия)
МИХАИЛ САДОВЯНУ (Румыния)
А. А. ФАДЕЕВ (СССР)
И. Г. ЭРЕНБУРГ (СССР)

1951 йыл, 6 апрель.
Мәскәү ҡалаһы.

Промышленность һәм транспорт агитаторҙарының республика кәңәшмәһе

4—6 апрелдә Башҡортостандың промышленность предприятиеларендә һәм транспортында эшләүсе алдынғы агитаторҙарҙың республика кәңәшмәһе булып үтте. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар, Башҡортостандың промышленность предприятиеларендә һәм транспортында массовый политик эштең торошо һәм уны тағы ла яҡшыртыуҙа агитаторҙарҙың бурыстары тураһында ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш **Сәетбатталовтың** докладын тыңланылар. Унан һуң «Туймазынефть» тресының беренсе промысла партия ойошмаһы секретары **Тадэйко**, Өфө тимер юл узелы партия ойошмаһы секретары **Удалов**, Өфө электр оборудованиелары заводы партия ойошмаһы секретары **Набиуллин** иптәштәр үҙ коллективтарында агит-массовый эштең торошо тураһында эш тәжрибәләрен уртаҡлашып, өҫтәмә доклад менән сығыш яһанылар.

Көн тәртибенең беренсе мәсьәләһе буйынса доклад яһаусы ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш Сәетбатталов үҙ докладының башында Советтәр Союзының эске һәм халыҡ-ара хәленә туҡталып үтте.

— Беҙ, — тине докладсы, — коммунизмдең еңеүе өсөн көрәштең бөйөк эпохаһында, сталинсе эпохала йәшәйбеҙ. Иптәш Сталиндең гениаль алдан күреп билдәләүе буйынса беҙҙең илебеҙҙә социализмдан аҡрынлап коммунизмға күсеү уңышлы рәүештә тормошҡа ашырыла. Марксизм-ленинизмдең бөйөк идеялары нигеҙендә тыныслыҡ, демократия һәм социализм лагере бөтә донъяла яңынан-яңы еңеүҙәргә өлгәшә.

Империалистәр капитализм системаһының котолғоһоҙ емерелеүе яҡынлашыуын күреп, ҡоралланыу артынан ҡыуыу, һуғыш расходтарын арттырыу, яңы һуғыш тоҡандырыу юлы менән капитализмдең емерелеү срогын уңышһыҙ рәүештә бер аҙ кисектерергә тырышҡан бер ваҡытта, Советтәр Союзы, Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә коммунистик төҙөлештең яңынан-яңы еңеүҙәрен яулап ала.

Докладсы, коммунизмға барыу юлындағы тарихи еңеүҙәрҙең асыҡ миҫалы итеп һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ пландың уңышлы үтәлеүен һәм илебеҙ халыҡ хужалығының тиҙәтле рәүештә үҫеүе совет халҡына коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен башларға мөмкинлек биреүен күрһәтә. Башҡортостан промышленносеның ғәйәт ҙур темптар менән үҫеүе тураһында туҡталғандан һуң, иптәш Сәетбатталов, был үҫешкә ирешеү өсөн көрәшкә хеҙмәтсәндәрҙе мобилизовать итеүҙә агитаторҙарҙың хеҙмәттәре ҙур булды, тип билдәләй.

— Республикабыҙҙың промышленность предприятиеларендә һәм транспортында, ти докладсы, 21 меңдән артығыраҡ агитатор эшләй. Уларҙың күбеһе массаларҙы ойоштороусылар булып торалар. Агитаторҙарҙың был армияһына таянып, партия ойошмалары агитацион-массовый эштең яңы күтәрелешен тәьмин иттеләр. Был күтәрелеш Советтәргә быйыл яҙ үткәрелгән һайлауҙар осоронда асыҡ күренде. Бурыс һайлауҙар кампанияһы осорондағы агитацион-массовый эште дөйөмләштереүҙән һәм уны артабанғы эшкә ҡулланыуҙан тора.

Республикабыҙҙағы агитацион-массовый эштәрҙең торошона туҡталып, докладсы, хужалыҡ эше менән политик эште осҡа бәйләп алып барған партия ойошмалары тураһында һөйләне. Улар иҫәбендә Белорет металлургия комбинаты, «Туймазынефть» тресының беренсе промыслаһы, Белорет ҡорос-сымбыҫ заводы һәм башҡа ҡайһы бер предприятиеларҙың партия ойошмаларын индерҙе. Белорет металлургия комбинатында, ти ул, 152 агитатор эшләй, унан тыш 32 кешенән докладсылар һәм лекторҙар группаһы төҙөлгән. Завод парткомы агитаторҙар менән системалы рәүештә йәкмәткеле эш алып бара. Агитаторҙарҙың семинарҙарында политик һәм производство темаларына докладтар һәм агитация эше алып барыуҙың методик мәсьәләләре ҡуйып тикшерелә. Комбинат эшселәре өсөн цехтарҙа айына бер тапҡыр политик, тәбиғи-фәнни һәм производство темаларына докладтар һәм лекциялар була. Үҙған йылда шундай 593 доклад һәм лекция үткәрелде, уларҙы 75 мең кеше тыңланы. Комбинатта агитацион-массовый эш конкрет бурыстарға бәйләп алып барыла һәм эшселәрҙе социалистик ярышҡа йәлеп итеүгә йүнәлтелә. Бында эшселәрҙең 94,4 проценты ярыш менән солғап алынған. Комбинатта яҡшы итеп ойошторолған күргәҙмә агитацияның да төп маҡсаты социалистик ярышҡа, производство планын арттырып үтәүҙе тәьмин итергә йүнәлтелгән. Партия ойошмаһының бөтә был массовый-политик эше уңышлы һөҙөмтәләр бирҙе. Комбинат 1950 йылда металлургияның бөтә тармаҡтары буйынса планды срогынан алда үтәүҙе һәм сүйын производствоһын 1946 йылға ҡарағанда, бер ярымдан артығыраҡҡа һәм 1940 йылға сағыштырғанда, ике тапҡырға арттырҙы.

Унан һуң, докладсы, Өфө тимер юлы партия ойошмаларының агитацион-массовый эшенә анализ яһаны.

Тимер юлында күпселек агитаторҙар үҙҙәренең эштәрен хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу, бик йөрөүсәләр хәрәкәтен үҫтереү, вагондар әйләнешен тиҙләтеү һәм поездар хәрәкәтенең хәүефһеҙлеге өсөн көрәшкә, пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу бурыстарына бәйләп үткәрәләр.

Стәрлетамаҡ йөк тейәү һәм бушатыу контораһы агитколлективы агитацион-массовый эште бик яҡшы үткәрә. Был коллективтың агитаторҙары Карпов, Васильев һәм башҡа иптәштәр үҙҙәре производство алдынғылары булып торалар. Шулай уҡ Ишембай, Черниковск һәм Өфө станцияларының да күпселек агитколлективтары яҡшы эшләйҙәр.

Ләкин беҙҙең агитаторҙарыбыҙҙың эшендә ҡайһы бер ыңғай күрһәткестәр менән бергә, ти докладсы, бик серьез етешһеҙлектәр ҙә бар әле.

Был етешһеҙлектәр нимәнән тора һуң?

Ҡайһы бер предприятиеларҙа агитаторҙар айырым производство участкаларына, бригадаларға, сменаларға беркетелмәгәндәр. Ҡайһы бер агитаторҙарға бик күп һанда кешеләр беркетеү хәлдәре лә бар. Өфө Ворошилов исемендәге аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһының тегеү цехында ике сменала 175 кеше эшләй. Шуға ҡарамаҫтан, цехта шуға тиклем бары бер генә агитатор эшләп килә.

8 Март исемендәге тегеү фабрикаһының өсөнсө номерлы цехында ике сменала 300 кеше эшләй. Был цехта бары ике агитатор бар. Уның да береһе агитатор ярҙамсыһы итеп иҫәпләнә.

Өфө Витамин заводының витамин цехында 80 эшсегә бер агитатор тура килә. Бындай етешһеҙлектәр Өфө телефон аппаратуралары заводында ла бар. Был заводтың ҡайһы бер цехтарында агитаторҙарҙы айырым төркөм эшселәргә беркетмәгәндәр. Билдәле, ундай хәлдәрҙә агитаторҙар кешеләрҙе өйрәнә алмайҙар һәм тапшырылған эш өсөн үҙҙәрендә яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр.

Беҙгә агитаторҙарҙы дөрөҫ урынлаштырыуға, һәр бригадала, сменала агитаторҙың булыуына, бер агитаторға даими рәүештә эш алып барыу өсөн беркетелгән кешеләрҙең 15—20-нән дә артмауына өлгәшергә кәрәк.

Ҡайһы бер агитаторҙарҙың эшендәге серьез етешһеҙлек итеп агитацияның алда торған конкрет бурыстарға бәйләп алып барылмауын күрһәтергә кәрәк. Мәҫәлән, тау оборудованиелары заводының агитаторҙары производствоның конкрет мәсьәләләре — продукцияның үҙҡиммәтен төшөрөү хаҡын кәметеү, бракҡа ҡаршы көрәш, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү мәсьәләләре буйынса беседаларҙы бик һирәк үткәрәләр. Агитаторҙар производство темаларын партияның политикаһы менән тығыҙ бәйләргә, бурыстарҙың политик әһәмиәтен аңлатырға тейештәр.

Агитацион эштәрҙең идея-политик яҡтан түбән кимәлдә үткәрелеүе агитаторҙар эшендә икенсе бер ҙур етешһеҙлек булып тора. Күп кенә агитаторҙар үҙҙәренең практик эштәрен ҡыҫҡырып газета уҡыуға ғына ҡайтарып ҡалдыралар. Политик темаларға беседаларҙы аҙ үткәрәләр.

Агитацион эштәрҙе ойоштороуҙа агитаторҙарҙың планлы рәүештә системалы эш алып бармауҙары, шулай уҡ ҙур етешһеҙлек булып тора. Күп кенә агитаторҙар үҙҙәренә тапшырылған был почетлы эште баһалап еткермәйҙәр. Мәҫәлән, телефон аппаратуралары заводында агитаторҙар үҙҙәренең эштәрен айға бер тапҡыр газета материалдарын уҡыуға ғына ҡайтарып ҡалдырғандар. Өфө Ворошилов исемендәге аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһы, Стәрлетамаҡ спирт заводы һәм башҡа күп кенә предприятиеларҙың партия ойошмалары һайлауҙарҙан һуң агитацион эштәрҙе туҡтаттылар тиерлек.

Шулай уҡ агитацион-массовый эште ойоштороу мәсьәләләренә лә аҙ иғтибар бирелә. Промысловый артелдәрҙә эшләүсе кешеләрҙең һаны аҙ тигән һылтаныу менән унда агитация эштәрен алып бармайҙар.

Миҫалға Өфө ҡалаһының XVIII партсъезд исемендәге артелен алайыҡ. Бында агитколлектив та ойошторолмаған. Барлыҡ эш культсоветҡа тапшырылған. Эшселәр араһында бер ниндәй ҙә политик тәрбиә эше алып барылмай. Төнгө сменала эшләүсе эшселәр араһында был тағы ла насарыраҡ.

Партия ойошмалары агитацион-массовый эштәрҙе ойошторғанда күп ваҡыт эшселәрҙең милли составына тейешле иғтибар биреп еткермәйҙәр. Промышленность предприятиеларендә эшселәрҙең туған телдәрендә лекция һәм докладтар һөйләнмәй, беседалар үткәрелмәй, газеталар уҡыу ойошторолмай. Ә, билдәле булыуынса, барлыҡ иптәштәр ҙә, бигерәк тә төҙөлеш ойошмаларында эшләүселәр, әле рус телен яҡшылап аңлап еткермәйҙәр. Был факттар бөтә эшселәрҙең дә политик агитация менән солғанып алынып бөтөрөлмәгәнлеген күрһәтәләр.

Күп кенә урындарҙа партия ойошмаларының агитаторҙарға тейешенсә етәкселек итмәүҙәре, уларҙың эштәренә дөрөҫ йүнәлеш бирмәүҙәре иң төп етешһеҙлек булып тора. Партия ойошмаларында политик агитацияға еңелсә, икенсе нәүбәттәге эш итеп кенә ҡарау бөтөрөлмәгән әле. Шуның арҡаһында аҙ грамоталы һәм әҙерлекһеҙ иптәштәргә агитаторлыҡ эшен тапшырыу ваҡиғалары ла йыш осрай. Семинарҙар регуляр рәүештә үткәрелмәй.

Унан һуң, докладсы, партия ойошмалары һәм агитаторҙар алдында торған бурыстарға туҡтала.

Бөтә эштәрҙә лә, шул иҫәптән агитация эшендә лә, — ти иптәш Сәетбатталов, — ыңғай тәжрибәләрҙе дөйөмләштереү һәм таратыу ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Шуға күрә лә иң яҡшы агитаторҙарҙың эш тәжрибәләрен дөйөмләштереү менән завод партия ойошмалары, партияның ҡала һәм район комитеттары, шулай уҡ район һәм өлкә газеталары күберәк шөғөлләнергә, был өлкәләге йәшен килтән серьез кәмселектәрҙе асыҡлап бөтөрөргә тейештәр. Сөнки хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүҙә агитаторҙар партия ойошмаларының яҡын ярҙамсылары булып һаналалар.

1947 йылдың ноябрендә ВКП(б) Үҙәк Комитеты Сталинград партия ойошмаһының агитаторҙар менән эшләүҙәге етешһеҙлектәр һәм был эште яҡшыртыу саралары тураһында ҡарар ҡабул итте. Был ҡарар беҙҙең партия ойошмаларыбыҙға ла тулыһы менән ҡағыла. Үҙәк Комитет үҙенең был ҡарары менән партия ойошмаларынан агитаторҙар менән эшләүгә, агитаторҙарға ярҙам ойоштороуға, уларҙың уҡыуҙарына, иң яҡшы агитаторҙарҙың эш тәжрибәләрен дөйөмләштереүгә һәм таратыуға айырыуса иғтибар биреүҙәрен талап итте. Агитколлективтарға етәкселек итеү тәүге партия ойошмалары секретарҙарының үҙҙәренә йөкмәтелә. Улар агитаторҙар өсөн аҙнаға бер тапҡыр регуляр рәүештә семинар үткәрергә, ә агитаторҙар үҙ нәүбәттәрендә халыҡ араһында һәр аҙна һайын беседалар үткәрергә бурыслылар.

Массовый-политик эштәрҙең күп төрлө формалары һәм методтары беренсе нәүбәттә һәр предприятиенең, цехтың, участкаһың государство планын үтәп барыуын тәьмин итеүгә, производствоның сифат күрһәткестәрен яҡшыртыуға, резервтарҙы тулыһынса файҙаланыуға йүнәлдерелергә тейеш.

Социалистик ярыш — беҙҙең бөтә хужалыҡ уңыштарыбыҙҙың нигеҙе ул. Социалистик ярыш, барынан да элек, агитацион-массовый эшкә бәйләнгән. Ярышҡа дөрөҫ етәкселек иткәндә генә, массовый-политик эштәрҙе актив рәүештә үткәргәндә генә көтөлгән һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин. Хеҙмәтсәндәрҙең ижади активлеге уларҙың аңлылыҡ кимәленә, уларҙың дөйөм халыҡ интерестарын аңлауҙарына бәйләнгән. Шуға күрә лә социалистик ярыш массаларҙы тәрбиәләү эшендә беренсе нәүбәттәге әһәмиәткә эйә булып тора.

Хеҙмәткә яңы методтарҙы индереү, техниканан яҡшыраҡ файҙаланыу, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн социалистик ярышты йәйелдереүҙә агитаторҙарға ҙур бурыстар йөкмәтелә. Агитаторҙар предприятиела социалистик ярышты ойоштороусылар булырға тейештәр.

Большевиктәр партияһы киң ҡатлам хеҙмәтсәндәрҙе тәрбиәләүҙә уларҙың производство һәм политик активлектәрен күтәреүҙә мөһим сара булған эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең йыйылыштарын үткәреүгә бик ҙур иғтибар биреп килә. Был йыйылыштарҙа партияның һәм хөкүмәттең мөһим ҡарарҙары, шулай уҡ предприятиенең үҙ тормошонан булған айырыуса кәрәкле мәсьәләләр тикшерелергә тейеш.

Хәҙер беҙҙең ауылдар колхоздарҙың эреләндерелеүе айҡанлы экономик һәм культура яғынан ҙур күтәрелеш осорон кисерәләр. Был осорҙа ауыл партия ойошмаларына идеология эштәрен яҡшыртыуҙа серьез ярҙам күрһәтеү талап итеүдә. Промышленность предприятиеларенең үҙҙәре шефлыҡ иткән колхозды һәм МТС-тары бар. Шуға күрә лә беҙгә яҙғы сәсеүгә әҙерлектә һәм уны үткәреүҙә шефлыҡ ярҙамын көсәйтергә, урындарға лекторҙар, докладсылар ебәреп торорға, клубтарҙың, уҡыу өйҙәренең һәм уларҙың художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәренең эштәрендә практик ярҙам күрһәтергә кәрәк.

1951 йылға республикабыҙҙың промышленносе алдына, — тине һүҙен тамамлап иптәш Сәетбатталов, — һан һәм сифат күрһәткестәрен яҡшыртыу буйынса серьез бурыстар ҡуйылды. Был бурыстарҙы тик массалар араһында политик эштәрҙе көсәйтеү һәм бөтә халыҡ социалистик ярышын йәйелдереү нигеҙендә генә уңышлы хәл итергә мөмкин.

Ҡушымта доклад менән сығыш яһаусы иптәш Тадэйко, промысла партия ойошмаһының агитмассовый эше хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүгә, Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталинға яҙған хатында алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйелдереүгә йүнәлдерелгән булыуы тураһында һөйләй. — Беҙҙең агитаторҙарыбыҙ, — тине ул, — ике төркөмгә бүленгән. Уларҙың бер төркөмө производствола эшләүселәр араһында агитацион-массовый эш алып бара. Был агитаторҙар дөйөм политик һәм производство темаларына үткәргән беседаларын үҙҙәре эшләгән участкаһың алдында торған конкрет бурыстарға бәйләйҙәр. Мәҫәлән, улар операторҙарҙың бер скважинаны хеҙмәтләндереүҙән ҙур скважинаны хеҙмәтләндереүгә күсеүҙәрен ойоштороуҙа бик ҙур ярҙам иттеләр. Икенсе бер агитаторҙар производствола эшләмәгән халыҡтың йәшәгән урындарында политик-аңлатыу эштәре алып баралар. Быларҙың беседаларының тематикаһы, билдәле, икенсе төрлө була. Улар халыҡты илебеҙҙең эске тормошонан һәм халыҡ-ара хәлдең мөһим ваҡиғалары менән таныштыралар. Уларҙы ҡаланың культура учреждениеларенең эштәрен һәм санитария торошон артабан яҡшыртыуҙа ҡатнашыуға саҡыралар.

Өфө тимер юл узелы партия ойошмаһы секретары иптәш **Удалов** үҙенең сығышында агитацион-массовый эште нисек итеп тимер юлсылар араһында социалистик ярышты йәйелдереүгә йүнәлтеүҙәре һәм уның ниндәй һөҙөмтәләргә килтереүенә туҡталды.

Өфө электр оборудованиелары заводы партия ойошмаһы секретары иптәш **Набиуллин** агитколлективтың һәм айырым агитаторҙарҙың эш тәжрибәләрен конкрет миҫалдар менән күрһәтте. — Партияһыҙ агитатор, мастер иптәш Андрианов, — тине ул, — энергетиктәр араһында агитацион эш алып бара. Ул политик һәм производство темаларына юғары йөкмәткеле бик күп беседалар үткәрҙе. Уның цехта электр энергияһына экономия яһау кәрәклеге тураһында үткәргән беседалары бик яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Энергетиктәр ғинуар һәм февраль айҙарында 98 мең киловатт-сәғәт электр энергияһына экономия яһанылар.

Докладтан һәм ҡушма докладтарҙан һуң эш тәжрибәләрен уртаҡлашыу буйынса фекер алышыуҙар башланды. Беренсе булып, Стәрлетамаҡ тимер юл станцияһының паровоздар депоһы машинисы, агитатор иптәш **Юнысов** сығыш яһаны.

— Агитатор үҙенең һүҙе тәьҫирле булһын өсөн, — тине ул, — агитатор үҙе производствоны яҡшы белергә, үҙе шул производствоның алдынғы кешеһе булырға тейеш. Мин комсомолецтарҙан торған колоннаға етәкселек итәм һәм үҙ эшемде намыҫ менән башҡарам. Партия ойошмаһы тарафынан бирелгән темалар буйынса беседалар үткәргәндә, тыңлаусыларҙы көндәлек эш нормаларын яҡшы сифатлы итеп, арттырып үтәргә саҡырам һәм был өлкәлә үҙемдең эш тәжрибәмде лә һөйләп бирәм.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар агитатор иптәш **Смирновтың** (Өфө ҡалаһы) сығышын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланылар. Иптәш Смирнов агитколлективҡа партия етәкселеге, агитаторҙар өсөн регуляр рәүештә семинарҙар үткәрелеүе тураһында айтҡандан һуң, агитатор булып эшләгән осоронда үҙенең идея-политик кимәлен күтәреү өҫтөндә нисек эшләүе тураһында һөйләне.

— Мин производствоға, — тине ул, — ете йыллыҡ мәктәп белеме менән килеп индем. Ләкин, партия һәм профсоюз ойошмалары ярҙамында, производствонан айырылмайынса ун йыллыҡ мәктәпте уңышлы тамамлауға өлгәштем. Хәҙер Өфө авиация институтында ситтән тороп уҡыйым. Мин агитация эшенең искусствоһына эйә булырға, үҙемдең белем кимәлемде даими рәүештә күтәрергә тырышам.

— Беҙҙең Ишембай тимер юл станцияһы, — тине агитатор иптәш **Абдюшкин**, — йөк тейәү һәм бушатыу буйынса беренсе квартал планын срогынан алда үтәне. Станция коллективы ҡышҡы осорға үҙ ваҡытында әҙерләнеп, поездар тотҡарлыҡһыҙ оҙатылды һәм маневр эштәре өҙөлмәне. Бында, агитатор булыуыбыҙ сифатында, беҙҙең дә хеҙмәтебеҙ бар. Беҙ, агитаторҙар, политик, производство һәм техник темаларға үткәрелгән беседаларҙы тимер юлсылар алдында торған бурыстарға тығыҙ бәйләп үткәрҙек.

Өфө телефон аппаратуралары заводы агитаторы иптәш **Мухина** яҡшы үткәрелгән агитацион-массовый эштең нисек итеп хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә йоғонто яһауы тураһында һөйләне. Завод партия ойошмаһы, — тине ул, — эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәр араһында политик-тәрбиә эштәренә ҙур иғтибар бирҙе. Шуның һөҙөмтәһендә завод хәҙер рентабелле эшләүсе предприятие булып әүерелде.

— Мин агитатор булыуым сифатында, — тине Белорет металлургия комбинаты агитаторы иптәш **Бобров**, — алдынғыларҙың тәжрибәһен пропагандалауға серьез иғтибар бирҙем. Был — хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, сифат күрһәткестәрен яҡшыртыуға һиҙелерлек ярҙам итте.

Красноусол былла заводының алдынғы агитаторы иптәш **Ишмуратов** эшселәр араһында политик, производство һәм техник темаларға маҡсатҡа йүнәлешле итеп үткәрелгән беседаларҙың ыңғай һөҙөмтәләр биреүе, транспорт цехындағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә лә ҙур ярҙам иткәнлеге тураһында һөйләне. Һәм һүҙен практик миҫалдар менән нығытты.

— Беҙҙең Өфө ит комбинаты, — ти үҙенең сығышында иптәш **Орловская**, — ҙур ғына уңыштарға өлгәште. Йыллыҡ һәм квартал планын арттырып үтәп беҙ ВЦСПС-тың һәм район Советы башҡарма комитетының күсмә Ҡыҙыл Байраҡтарын яулап алдыҡ. Был уңыштар үҙлегенән генә килмәне. Бөтәһенән дә элек, цехтарҙа агитацион-массовый эштәрҙе, социалистик ярышты киң йәйелдерҙек. Бында күргәҙмә агитация ла ҙур роль уйнаны. Производстволағы күрһәткестәр регуляр рәүештә стена газеталарында, боевой листоктарҙа яҡтыртылды. Яҡшы башланғыстарҙы бөтә коллективтың достояниеһе итеү өсөн тырыштыҡ һәм быға өлгәштек.

Черниковск ҡалаһы фанера комбинатының агитаторы иптәш **Мокроусов** партия ойошмаһы тарафынан бирелгән почетлы поручениены үҙенең нисек башҡарыуы тураһында һөйләне.

— Ҡайһы бер агитаторҙар, — тине ул, — был яуаплы эште тейешенсә баһалап еткермәйҙәр, хатта ҡайһы ваҡыт үҙҙәренең агитатор булыуҙарын да онотолар. Был — ҙур етешһеҙлек. Мин быға бер ваҡытта ла юл ҡуймайым, эште конкрет план нигеҙендә алып барам. Беседаларҙы партия ойошмаһы тарафынан бирелгән тематикалар буйынса үткәрәм. Шулай уҡ идея-теоретик кимәлемде күтәреү, техник һәм экономик белемгә эйә булыу өсөн тырышам. Сөнки шунан башҡа массаларҙың алдында барып булмай.

Иптәш **Савельев** Өфө таҡта ярыу заводы партия ойошмаһын агитаторҙар эшенә насар етәкселек иткәне өсөн бик ҡаты тәнҡитләне.

— Беҙҙең заводта, — тине ул, — агитацион-массовый эш кампаниялар уңайынан ғына үткәрелә. Төгө йәки был кампания үтеү менән агитация эштәре туҡтала. РСФСР һәм БАССР Верховный Советтарына һайлауҙарҙан һуң агитаторҙарҙың семинарҙары, кәңәшмәләре үткәрелмәй. Партия ойошмаһы беҙҙән эш талап итмәй. Беҙҙең заводтың бик ҙур клубы бар. Ләкин партия ойошмаһы унан файҙаланмай. Клубты эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр менән культура-массовый, политик-тәрбиә эштәре үткәреүҙең үҙәге итеү өсөн көрәшмәй. Бында ВКП(б)-ның Ленин район комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге лә гәйепле. Ул партия ойошмаһынан агитаторҙар менән эште яҡшыртыуын талап итмәй.

Стәрлетамаҡ ҡалаһының Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводы агитаторы иптәш **Садовский** былай тине:

— Партия ойошмаһы миңә әле күптән түгел генә производствоға килгән, тәжрибәле иптәштәрҙең ярҙамына мохтаж булған йәш эшселәр араһында агитация эштәре алып барыуҙы тапшырҙы. Мин үҙем туранан-тура производствола эшләгәнлектән, йәш эшселәргә бик яҡын торам. Уларҙың нимәләр менән ҡыҙыҡһыныуҙарын бик тиҙ беләм һәм барлыҡ һорауҙарын үҙ ваҡытында ҡәнәғәтләндерергә тырышам. Беседаларҙы ниндәй темаларға үткәрһәм дә, уны производство бурыстарына бәйләйем.

«Туймазынефть» тресының беренсе автотрактор контораһы агитаторы иптәш **Фәхретдинов** коллективта агитацион-массовый эште киң йәйелдереү арҡаһында йөк ташыуҙың I квартал планын 1... процентҡа еткереп үтәүҙәре тураһында һөйләне. Мин, — тине ул, — унан һуң, автотрактор конторауының карбюратор цехында агитатор булып эшләйем. ... дөйөм политик темаларға беседалар үткәргәндә цех эшселәренә автомашиналарҙың техник төҙөк булмауҙары арҡаһында буш ултырыуҙарына юл ҡуймаҫ өсөн беҙҙең цехҡа бәйләнгән бөтә эште яҡшы менән үтәү кәрәклеген аңлатам.

— Мин агитатор булып эшләгән ... механика бүлеге эшселәре менән, — тине Бәләбәй машиналар төҙөү заводы агитаторы иптәш **Стреминский**, — партия ойошмаһы тарафынан бирелгән тематика һәм газеталарҙа баҫылып сыҡҡан иң мөһим материалдар буйынса системалы рәүештә беседалар үткәрәм. СССР Верховный Советы сессияһының бюджет һәм тыныслыҡ тураһында ҡабул иткән законы буйынса беседа үткәргәндә, мин эшселәргә беҙҙең партиябыҙҙың һәм хөкүмәтебеҙҙең хеҙмәтсәндәр тураһында, уларҙың материаль көн-күреш шарттарын яҡшыртыу тураһында ниндәй ҙур хәстәрлек күреүҙәрен аңлаттым. Беренсе бөйөк Тыуған илебеҙҙең тормошонда тарихи әһәмиәткә эйә булған ваҡиғаларға бай. Беседа үткәреү өсөн темалар күп. Шуға күрә лә мин беседаларҙы көн һайын үткәрергә тырышам. Бының өсөн иртәнге эш алдын, төшкө аш ваҡытын файҙаланам. Эшселәр үҙҙәренең иләктәре менән иртәнсәк эшкә 20 — 15 минутҡа алдан киләләр һәм минең көн һайын яңылыҡтарҙы аңлата барыуымды, беседа үткәреүемде һорайҙар. Верховный Совет сессияһы материалдарын таратып бөтөрөүгә заводта яңы производство күтәрелеше тыуҙырҙы. Беҙҙең завод I квартал планын срогынан алда арттырып үтәне. Хәҙер беҙ май алды ярышын йәйелдерҙек.

Черниковск ҡалаһының 1-се номерлы теплоэлектроцентрале котел цехы мастеры, агитатор иптәш **Малеев** үҙенең сығышында былай тине: — Мин ҡарамағымдағы сменалағы 15 эшсе араһында агитация эше алып барам. Беседаларымды эшселәрҙең белем кимәлдәрен иҫәпкә алып ойоштороам. Уларға ябай һәм аңлайышлы телдә төшөндөрөп бирергә тырышам. Материалдарҙы газеталарҙан, журналдарҙан һәм агитатор блокноттарынан алам. Ләкин был материалды уҡып сығыу юлы менән түгел, ә үҙ һүҙем менән һөйләп бирәм. Беседаларҙы күбеһенсә төшкө аш ваҡытында үткәрәм. Мин үҙем өсөн дүрт исемдә үҙәк һәм өлкә газеталары алдырам. Шәхси библиотекамда художестволы әҙәбиәттән рус классиктары Пушкин, Гоголь, Толстой, Некрасов һәм Лермонтовтың бөтә әҫәрҙәре лә бар. Ҡайһы бер беседаларҙа кәрәк булғанда классиктарҙан өҙөмтәләр килтерәм. Был күбеһенсә ҡыҙыл мөйөшкә йыйналабыҙ. Мин күп ваҡытта беседалар үткәргәндә географик карталарҙы һәм башҡа күргәҙмә материалдарҙы киң файҙаланырға тырышам. Шундай яҡшы әҙерләп үткәрелгән беседа эшселәргә яҡшы йоғонто яһай.

— Мин, — тине үҙенең сығышында «Туймазыбурнефть» тресындағы 2-се номерлы бораулау конторауының турбина цехы агитаторы иптәш **Курочкин**, — агитаторҙың эшендәге ике мөһим мәсьәләгә туҡталырға теләйем. Агитацион-массовый эш алып барған коллективта агитаторҙың шәхси авторитеты һәм үҙ өлгөһө күрһәтеүе большевистик агитацияның тәьҫирле булыуының мөһим шарты булып тора. Үҙең эш нормаңды арттырып үтәмәй тороп, башҡаларҙы фиҙакәр хеҙмәткә саҡырыу мөмкин түгел. Шуға күрә мин эш нормамды айҙан-айға 150—160 процентҡа еткереп үтәп киләм. Кешеләргә уларҙың айырым үҙенсәлектәренә ҡарап яҡын килеү, агитация эшендә икенсе бер мөһим шарт булып тора. Йәш эшсе иптәш Южаков менән индивидуаль беседалар үткәреү һөҙөмтәһендә ул тағы ла юғарыраҡ хеҙмәт етештереүсәнлеге бирә башланы һәм комсомол сафына инде.

Кәңәшмәлә Өфө ҡалаһының 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы агитаторы **Шамматов**, Белорет ҡорос-сымбыҫ заводы агитаторы **Тарасов**, Өфө станцияһы вагондар депоһы агитаторы **Шангин**, Октябрьский ҡалаһының төҙөлөш управлениеһе партия ойошмаһы секретары **Тафшин** һәм башҡа иптәштәр — бөтәһе 3... кеше фекер алышыуҙа ҡатнашты.

Унан һуң ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш Сәетбатталов йомғаҡлау һүҙе менән сығыш яһаны.

ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш **Долиных** Башҡортостан промышленносеның эшендә сифат күрһәткестәрен тағы ла яҡшыртыу бурыстары тураһында доклад һөйләне.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар оҙаҡҡа һуҙылған көслө алҡыштар аҫтында бөтә прогрессив кешелектең генийе, бөйөк юлбашсыбыҙ Иосиф Виссарионович Сталинға хат ҡабул иттеләр.

Кәңәшмәнең аҙағында партия Өлкә Комитетының лекторы иптәш Аблеев кәңәшмәлә ҡатнашыусылар өсөн халыҡ-ара хәл тураһында лекция уҡыны. Шуның менән кәңәшмә үҙенең эшен тамамланы.

Һүрәттә: Промышленность һәм транспорт агитаторҙарының республика кәңәшмәһендә ҡатнашыусы Черниковск ҡалаһы агитаторҙарынан бер төркөм. М. Әхмәтьянов фотоһы.

Һал ағыҙыу—государство әһәмиәтендәге мөһим эш

Заданиеләрҙе уңышлы үтәйәсәкбеҙ

Уразбахты һал ағыҙыу контораһы коллективе быйылғы навигация планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик йөкләмәләрҙе. Ҡышҡы һаллау планы март айында уҡ тамамланды. Контораның ағас ағыҙыу участкалары коллективтәре араһында һуңғы көндәрҙә май социалистик ярыш киңәйә бара. [illegible] ағас ағыҙыу участкаһы алдынғылары Мәхмүтьяров, Ғәйсин, Хисаев һәм [illegible] иптәштәрҙең бригадалары үҙҙәренең нормаларын 120 — 130 процентҡа үтәйҙәр.

[illegible] ағас ағыҙыу участкаһында ҡышҡы һаллау эше өлгәлә ойошторолдо. Һәр [illegible] унда Зәбәйдуллин, Ғәлиәхмәтов, [illegible] һәм башҡа иптәштәр етәкселек [illegible] бригадалар ҡышҡы һаллау буйынса [illegible] планды срогынан алда тамамланылар. Иптәш Зәбәйдуллин бригадаһы 2.200 фестметр ағас һаллау урынына 3.400 фестметр ағас материалдары һалланы.

Йәйге һаллау эшенә әҙерлек буйынса [illegible] байтаҡ күп кенә эштәр башҡарылды. [illegible] һаллау өсөн ҡулланыла торған 4 [illegible] 3-өһө ремонтланды. Ә дүртенсеһе хәҙер ремонтланып бөтөү алдында. [illegible] Ағастарҙы һалламайынса ағыҙа торған [illegible] һәм Сарс йылғаларында, бөтәһе 117 [illegible] метр оҙонлоғонда мелиорация эштәре үткәрелде. Һалланмай ағып килгән ағастарҙы туктатыу өсөн ҡуйыла торған бондар алдан әҙерләп ҡуйылды. Был [illegible] ағас ағыҙыу эшен 10 — 12 көн [illegible] башларға мөмкинлек тыуҙырасаҡ.

[illegible] ағас ағыҙыу эшендә механизация [illegible] тулы ҡеүәтендә файҙаланыуға ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Катерҙар [illegible] 800 фестметр ағыулыҡ әҙерләнде. [illegible] йыһазландырыу һәм нығытыу [illegible] такелаж, канат, волокуша кеүек [illegible] ярҙамсы инструменттәр һәм кәрәк-яраҡтар алдан әҙерләнеп ҡуйылды.

Беҙҙең һал ағыҙыу контораһында 1951 йылғы һал ағыҙыу планын срогынан алда үтәү өсөн ҙур мөмкинлектәр бар. Беҙ быны бөтә тулылығы менән файҙаланасаҡбыҙ.

Р. Нигмәтьянов,

Уразбахты һал ағыҙыу контораһы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары.

Нормаларҙы арттырып үтәйҙәр

[illegible] һал ағыҙыу контораһында навигацияға әҙерлек уңышлы бара. Контора коллективы быйылғы навигацияны [illegible] үткәреү буйынса ҙур һыҙ эштәр [illegible]. Унда 50 урынына 58 һал өйө [illegible]. Улар эре һалдарға ҡуйылалар. [illegible] музыкаль инструменттәр, плакаттар һәм художественная әҙәбиәт алынды.

Эшселәр өсөн һәм тормош шарттары яҡшыртылды.

Контора коллективе хәҙер, май алды [illegible] һал ағыҙыу инструменттәрен, оборудованиеларҙы һәм һал [illegible].

[illegible] Маликов, Зарипов, Ғәйсин, Ишмаков [illegible] бригадалары һалдарҙа бөн тәҙәү буйынса үҙ нормаларын системалы рәүештә 150—240 процентҡа үтәйҙәр. Иптәш Нурғалин етәкселек иткән бригада коллективе бөн тәҙәү буйынса үҙенең заданиеһен 146 процентҡа үтәй. Бригада члендәре Сабирова һәм Хәйруллина иптәштәр квалификацияһы аҙ булған йәш эшсене һал ағыҙыу техникаһына өйрәттеләр.

З. Исмағилов.

Һал ағыҙыу эшен срогынан алда тамамлау өсөн

Быйыл, үткән йылға ҡарағанда, һал ағыҙыу планы республикала байтаҡ артыҡ. Шуға күрә уны срогынан алда үтәү өсөн һал ағыҙыу контoралары һәм леспромхоз коллективтәренә, шулай уҡ район хеҙмәтсәндәренә әҙерлек сараларын алдан уҡ күреү мөһим шарт. Государство планын навигацияны тик тулы әҙерлек менән ҡаршы алғанда һәм уны уңышлы башҡарғанда ғына срогынан алда үтәргә мөмкин.

Ләкин, ҡыҙғаныска ҡаршы, республикала һал ағыҙыу эшенә әҙерлек айырыуса насар тора. Бик күп һал ағыҙыу контoралары һәм леспромхоздар был тәңгәлдә үҙҙәренең ғәмһеҙлеген күрһәтәләр. Ағиҙел йылғаһының үрге бассейненең Бетерә, Ырғыҙлы, Кага, Каса, Күркәтау, Үҙән һәм башҡа йылғаларында һыуҙың боҙ өҫтөнә китеү ваҡиғаһына ҡаршы көрәштә күптән уҡ тейешле кимәлдә йәйеп ебәрергә кәрәк ине. Ә ул бөгөнгә көндә киреһенсә тора. 75 километр оҙонлоғондағы урында боҙ өҫтөнә һыу китеүгә ҡаршы көрәш буйынса бөтәһе тик 10 километр ғына канау ҡаҙылған. Ул эште башҡарыуға Әбйәлил, Бөрйән, Воскресен, Йылайыр, Көйөргәҙе һәм Матрай районадары беркетелгәндәр. Ләкин район Советтәренең исполкомдары Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы биргән заданиене үтәүгә насар ҡарайҙар, боҙҙо ватыу өсөн етерлек тиклем эшсе кестәре булмайҙар.

Үрәҙ [illegible] йылғаларында боҙ өҫтөнә һыу китеү [illegible] ваҡиғаһы был йылда байтаҡ. [illegible] ярҙамында канау ҡаҙыу юлы менән [illegible]. Был эште механизациялаштырыу менән «Башлесосплав» тресы инженер-техник работниктары шөғөлләнмәй.

Ағас материалдарын ҡайһы бер йылғаларҙа плотина ҡороп, [illegible] һыу ебәреү юлы менән ағыҙыуға тура килә. Быйыл Бетерә, Ырғыҙлы, Аҙ, Кага һәм башҡа йылғаларҙа [illegible] кәрәк ине. Ләкин [illegible] леспромхоз тарафынан был эш [illegible].

1950 йылда Ағиҙел йылғаһының үрге бассейнендә 50 мең кубометрҙан да артыҡ ағас ағыҙылмай ҡалды. Бында төп сәбәп булып ҡайһы бер райондарҙың ваҡытында тейешле һанда эшсе кестәрен ебәрмәүҙәре торҙо. Район Советтәре исполкомдары үткән йылғы хатаны ҡабатламаҫ өсөн быйыл бөтә көстә һал ағыҙыу эшенә һалырға бурыслылар.

Һал ағыҙыу эшендә уңыш шулай уҡ ағас материалдарын һыуға тиҙерәк төшөрөү менән дә ныҡ бәйле.

Һал ағыҙыу ойошмалары һәр йыл һайын һалдарҙың аварияларынан, батыуынан, таралыуынан ағас материалдарының бик күп юғалыуын кисерә. Йылға буйҙарында, үҙәктәрендә йыл һайын бик күп ағас материалдары туплана. Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты «Башлесосплав» тресын быйылғы навигацияла был ағастарҙы йыйыу эшен йәйелдерергә мәжбүр итә. Леспромхоздар һәм һал ағыҙыу контoралары үткән йылдарҙа һыуға батҡан, яр буйҙарында ҡалған ағас материалдарын йыйыу эшен ойошторорға тейештәр.

Быйыл яңынан үҙләштерелгән Ләмәҙә йылғаһында күп кенә ағас ағыҙылырға тейеш. Был йылғаға артыҡ ҙур мелиорация эштәре үткәрелмәне. Шуға күрә һал ағыҙыу эшен бында бик ҡыҫҡа срок эсендә башҡарыу талап ителә. [illegible] Архангель, Ҡырмыҫҡалы, Бөзәнә, Ауырғазы район Советтәре исполкомдарының [illegible].

«Башлесосплав» тресы работниктәре, һал ағыҙыусылар һәм колхозсылар алдында [illegible] һал ағыҙыу контoраларының [illegible] алда [illegible] ителә. Һәм ул, һис шикһеҙ, срогынан алда үтәлергә тейеш.

В. Митюгов.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы урман промышленноҫе һәм урман хужалығы теркөмөнөң мөдире.

Яман йылғала навигацияға әҙерлек насар

Яман йылға һал ағыҙыу контораһында етәксе работниктәр 1950 йылда үҙ бурыстарына яуапһыҙ ҡаранылар. Һөҙөмтәлә ағас ағыҙыуҙың үткән йылғы навигация планы тик 47 процентҡа ғенә үтәлде. Ағас ағыҙыуға бөтә мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан, был контора 1950 йылда 700 кубометр ағас материалдарын Һалдыбаш йылғаһы тамағында туңдырып ҡалдырҙы.

Яман йылға һал ағыҙыу контораһы работниктәре үткән йылғы һабаҡтарҙы онотҡандар. Навигацияға әҙерлек быйыл да сиктән тыш насар тора. Контора буйынса һалдарҙы нығытыу өсөн сөй әҙерләү планы бары 60 процентҡа, багор һәм ырғаҡтар яһау — 64 процентҡа, көмәлөр төҙөү планы 15 процентҡа ғенә үтәлгән. Шулай уҡ башҡа ярҙамсы инструменттәрҙе әҙерләү буйынса ла эш насар хәлдә. Контора тарафынан леспромхоздарҙан ағас материалдарының тик яртыһы ғына ҡабул ителгән. Бындай етешһеҙлектәр Яман йылға һал ағыҙыу контораһын быйыл да, үткән йылғы кеүек, уңышһыҙ һөҙөмтәгә килтерәсәгенә шик тыуыу ҡыйын түгел.

Бындай серьез етешһеҙлектәр Нуриман леспромхозында ла бар. Ул ағас ағыҙыу эше менән Сим йылғаһында шөғөлләнергә тейеш. Ләкин леспромхоз директоры иптәш Боков государство әһәмиәтендәге [illegible].

1951 йылғы навигацияны уңышлы [illegible] тейешле [illegible].

Х. Бадретдинова,

ВКП(б)-ның Нуриман район комитете секретаре.

Бүздәк районы Тимирязев исемендәге колхоздың 500 точканы хеҙмәтләндерә алырлыҡ радиоузелы бар. Хәҙер бөтә колхозсыларҙың да өйҙәре радиолаштырылды.

Һүрәттә: Радист А. Коб...зов Мәскәү радио станцияһын транслировать итә.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ауыл Советы председателе трибунаһы

Общественный малсылыҡты үҫтереү өсөн көрәштә ауыл Советы

Общественный малсылыҡты үҫтереүҙә беҙҙең Таҙлар ауыл Советына ҡараған колхоздар йылдан-йыл матур ғына һөҙөмтәләргә өлгәшеп киләләр. Был тәңгәлдә уҙған 1950 йыл айырыуса характерлы булды. Беҙҙең ауыл хужалығы артелдәрендә общественный малдар өсөн 20 яңы торлаҡ төҙөлдө, ҡышҡы осорға етерлек аҙыҡ әҙерләнде. Ауыл Советының эреләтелгән ике колхозында ла общественный малсылыҡты үҫтереүҙең государство планы байтаҡ арттырып үтәлде. Колхоз малдарының продукт биреүсәнлеге һиҙелерлек күтәрелде.

Өлгәшелгән уңыштарҙа ауыл Советының хеҙмәте ҙур, әлбиттә. Колхоздарҙа общественный малсылыҡты үҫтереү, мал аҙығы әҙерләү, малдар өсөн торлаҡтар ҡороу һәм башҡа шундай мәсьәләләр ауыл Советының сессияларында һәм исполком ултырыштарында йыш ҡына ҡаралып, хәл ителде. Бындай мәсьәләләрҙе тикшереүгә һәр ваҡыт колхоз председателдәре, ферма мөдирҙәре һәм малсылыҡ работниктәре ҡатнашлыҡ итәләр. Киң активтең ҡатнашлығында эшләү көн тәртибендәге мәсьәләләрҙе тәрән һәм һәр яҡлап өйрәнеүҙе, улар буйынса эшлекле ҡарарҙар сығарыуҙы тәьмин итә. Шуның менән бер рәттән, бына ошолай эшләү малсылыҡ алдынғыларының эш тәжрибәһен киң пропагандалау мөмкинлеген бирә. Миҫалға, ауыл Советының күптән түгел генә үткәрелгән сессияһын алырға мөмкин. Сессия Буденный исемендәге колхозда малдарҙы ҡышлатыу мәсьәләһен ҡараны. Был турала правление председателе иптәш Бояркиндың информацияһын тыңлағандан һуң, фекер алышыуҙар үткәрелде. Советтең ауыл хужалығы буйынса даими комиссияһы председателе Манаков үҙенең сығышында малдарҙы ҡышлатыуҙа булған байтаҡ етешһеҙлектәрҙе асты. Һәм башҡа колхоздар практикаһынан сығып, был кәмселектәрҙе бөтөрөү юлдарын күрһәтте. Ошонда уҡ ул үҙе етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһында мал аҙыҡтарын расходлау һәм аттарҙы тәрбиәләү тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Ҡаралған мәсьәлә буйынса сессия ҡабул иткән ҡарарҙың үтәлешен тикшереү шул уҡ иптәш Манаковҡа йөкмәтелде. Ә бер нисә көн уҙғас ул исполком ултырышында ҡарарҙың үтәлеше тураһында отчет яһаны. Малдарҙы ҡышлатыуҙа асылған етешһеҙлектәр ошолай эҙмә-эҙлекле эшләү һөҙөмтәһендә аҙағына тиклем бөтөрөлдө. Үҙ өҫтәренә йөкмәтелгән бурыстарҙы намыҫ менән үтәүсе депутаттарҙың, малсылыҡ работниктәренең тырышлығы арҡаһында колхоздың малдары урта көрлөктә ҡышлатылдылар.

Общественный малдарҙы тәрбиәләүҙә беҙ ваҡ нәмәләр юҡ, тип иҫәпләйбеҙ. Бөтә мәсьәләләрҙе лә үҙ ваҡытында хәл итә барырға тырышабыҙ. Күптән түгел Ленин исемендәге колхоздың бер фермаһында малдарҙың йәштәре һәм башҡа билдәләре буйынса тейешле группаларға бүленмәүе беленде. Ауыл Советы депутаттарының ярҙамында был кәмселек тиҙ арала бөтөрөлдө.

Колхоздарҙа үткәрелә торған төҙөлөш эштәре көн һайын үҫә барған малсылыҡтың талаптарын ҡәнәғәтләндерә, тип әйтеп булмай әле. Беҙ был тәңгәлдә шул уҡ Буденный исемендәге ауыл хужалығы артелендә килеп тыуған ваҡытлы ҡыҫынлыҡты кисерҙек. Ваҡ малдарҙың үрсеме шул тиклем күп булды, улар өсөн әҙерләнгән торлаҡтар етешмәй башланы. Колхоз правлениеһына һис кисектергеһеҙ ярҙам талап ителде. Бер группа малдарҙы икенсе урынға күсереү нигеҙендә үрсемдәргә яраҡлы бина әҙерләнде.

Ауыл Советы малсылыҡ работниктәре араһында күп кенә ойоштороу эштәре үткәрә. Депутаттарҙан Манаков, Щубин, Шмырев, Перова һәм башҡа иптәштәр малсылыҡ работниктәренә өҫтәмә түләүҙәр тураһындағы ҡарарҙарҙы аңлаталар, малсылыҡ алдынғыларының эш тәжрибәләре менән таныштыралар. Ошо уҡ ваҡытта улар малсылыҡ работниктәренең бер урында оҙаҡ эшләүҙәренә, кадрҙарҙы нығытыуға һәм уларҙың ихтыяждарына һиҙгер булыуҙы көсәйтеүгә өлгәшәләр.

Колхоздарҙа общественный малсылыҡты үҫтереүҙең һәм уның продуктивлеген күтәреүҙең государство планын уңышлы үтәүгә беҙҙең бөтә мөмкинлектәребеҙ бар һәм пландарҙың үтәлеүенә, һис шикһеҙ, өлгәшәсәкбеҙ.

В. Кулаков,

Зианчура районы Таҙлар ауыл Советы председателе.



Ағиҙел пароходствоһының судноларҙы һал ағыҙыу кампанияһында йыл һайын актив ҡатнашып киләләр.

Һүрәттә: Бассейндең буксер пароходтары. Улар Ағиҙел йылғаһының асылыуын көтәләр.

А. Червинский фотоһы.

Үткән йылғы хаталарҙы ҡабатламаҫҡа

Һал ағыҙыу работниктәре өсөн иң яуаплы осор килеп етте. Ул — ағас әҙерләүҙең иң яуаплы, ныҡышмалы эш талап итеүсе фазаһы. Йөҙ меңләгән кубометр ағас материалдары илебеҙҙең промышленность предприятиеләренә, яңы төҙөлештәренә оҙатылырға тейеш. Һал ағыҙыу контoралары коллективтәренә [illegible] ташҡында ла, йәйге һай һыулы [illegible] тау йылғаларында ла эш итергә тура килә. Шуның өсөн улар навигацияла бөтә төр ауырлыҡтарҙы еңергә, юғары ойошҡанлыҡ күрһәтергә бурыслылар.

Үткән йыл республикала һал ағыҙыу навигацияһы көҙгә тиклем һуҙылды. Шуға ҡарамаҫтан, план тик 70 процентҡа ғына үтәлде. Халыҡ хужалығы унар меңләгән кубометр ағас материалдарын алып еткермәне. Ағиҙел йылғаһына ҡойоусы вак йылғаларҙа 50 мең кубометрҙан артыҡ, Сим йылғаһында 28 мең кубометр ағас материалдары яр буйҙарында, һайға ултырып, һыу төбөнә батып ҡалдылар. Бик күп ағас материалдары Юрүҙән йылғаһында юғалды. Яман йылға һал ағыҙыу контораһы етәкселәренең үҙ эштәренә ғәмһеҙ ҡарауҙары һөҙөмтәһендә, 700 кубометр күләмендә һал боҙ аҫтында туңды. Уны боҙҙан ватып алыу өсөн 25 мең һум расход тотолдо.

Әгәр ағас әҙерләүҙең, ташыуҙың һәм һал ағыҙыу ваҡытындағы юғалтыуҙарҙың үҙәмә төшөү хаҡын иҫәпләгәндә, государствоға иң тиклем ҙур зыян күргәнен һәр кем белә. Ләкин «Башлесосплав» тресында етәксе работниктәр факттарҙы дөйөмләштерергә, уларға анализ яһарға, уларҙан практик һөҙөмтә сығарырға яратмайҙар. Унда тик йыл һайын ҡабатланып торған юғалтыуҙарҙы теркәү һәм етешһеҙлектәрҙе «ҡарғау» менән генә шөғөлләнәләр. Трест работниктәре бындай етешһеҙлектәрҙе төҙәтеү өсөн һөҙөмтәле сара күрмәйҙәр, һал ағыҙыуҙың перспектив мәсьәләһен хәл итмәйҙәр, тик бөгөнгө көн менән генә йәшәйҙәр.

«Башлесосплав» тресы эшендә берҙәмлек, һал ағыҙыу эшен ойоштороуҙа берҙәм принципиаль линия юҡ. Шуға ла, леспромхоздар һәм һал ағыҙыу контoралары араһында ағас материалдарын ҡабул итеү һәм тапшырыу, йылғаларға мелиорация эштәре үткәреү, һал өсөн материалдар әҙерләү һәм башҡа шундай эштәр тураһында килеп сыҡҡан бәрелештәр бер кемгә лә ғәжәп түгел. Ағас материалдарының сифаты, техник яҡтан ашкартелеүе, сорттарға бүленеүе һәм штабелдәргә өйөлөүе, уларҙың һалдарға яраҡлылығы һәм яраҡһыҙлығы тураһында ҡайғыртыусы һәм ҡыҙыҡһыныусы кеше юҡ.

Ҡайһы бер леспромхоздар ағас материалдарын яр буйына һалдарҙы нығытыу өсөн кәрәк булған материалһыҙ ташыйҙар. Асыл леспромхозы ошо көнгә тиклем 9 мең кубометр фанера сырьеһына һәм промышленносҡа кәрәк булған башҡа ҡиммәтле ассортименттарҙы һал ағыҙыу контoраларына тапшырмаған. Сөнки уларҙы һаллағанда нығытыу өсөн кәрәкле материалдар әҙер түгел. Юрүҙән леспромхозы директоры Крылов һәм баш инженеры Чвыков иптәштәрҙең талапсанһыҙлығы арҡаһында, сезон осоронда әҙерләнгән ағас материалдарының 15 проценте тапшырылмаған. Был ҡиммәтле ағас материалдары техник яҡтан ашкартелмәгәнлектән һәм йәйге көндәргә ҡала торған утын материалдары менән бергә өйөлгәнлектән һал ағыҙыу контораһы уларҙы ҡабул итмәй. Күрәһең, иптәш Крылов быйыл да, үткән навигацияларҙағы кеүек, һал ағыҙыу контораһы сифаты түбән булған ағас материалдарын ҡабул итер, тип уйлай.

Үткән йылғы навигацияла Кананикольск һәм Бөрйән леспромхоздары Ағиҙелгә ҡойоусы йылғаларҙа 33 мең кубометр ағасты ташлап ҡалдырҙылар. Улар ағыҙылмаған был ағас материалдарын, закон буйынса, йыйып алырға һәм уларҙы тәртипкә индерергә тейештәр ине. Ләкин был юғалтыу өсөн Кананикольск һәм Бөрйән леспромхоздары етәкселәре ғәфү ителделәр һәм тәртипһеҙ рәүештә йылға буйынса таралған ағас материалдарын йыйыу эше 400 километр алыҫлыҡта торған Стәрлетамаҡ һал ағыҙыу контораһына йөкмәтелде.

Үткән йылдың көҙөндә, Чумар һал ағыҙыу контораһын бөтөргән ваҡытта, уның йөҙ кешегә яҡын даими эшселәре һәм шулай уҡ мастерҙары, десятниктәре — бөтәһе лә Таныш леспромхозына беркетелгәйнеләр. Улар Таныш бассейнендә һал ағыҙыу эшен ойошторорға тейештәр ине. Атап әйткәндә, был леспромхоз «Камлесосплав» тресына Волгаға транзит менән оҙатыу өсөн ҡыш көнө һалланған эре һалдар әҙерләргә тейеш ине. Ғәмәлдә нәмә булды һуң? Ҡышҡы һаллау эшен ситтә ҡалдырып, леспромхоз директоры иптәш Кирьянов, рөхсәтһеҙ Чумар һал ағыҙыу контораһынан килгән бөтә даими эшселәрҙе ағас әҙерләү эшенә мобилизовать иткән. Хәҙер, һалдарҙы оҙатыу осоро килеп еткәс, Чумарҙа аврал башлана, леспромхоздан йөҙәрләгән эшсе ҡышҡы һаллау эшен форсировать итеү өсөн ебәрелә. Ләкин аврал менән генә «тау аҡтарып» булмай. Чумарҙа 20 мартка ҡышҡы һаллау планының тик өстән бер өлөшө генә үтәлә.

Яңы навигацияға әҙерлектә бик күп эшләһе бар. Ҡышҡы һаллау тамамланмаған, яр буйына ташылған ағас материалдарын һал ағыҙыу контoралары ҡабул итмәгәндәр, такелаждар әҙер түгел, инструмент, аҙыҡ-түлек һәм башҡа шундай кәрәк-яраҡтар һал ағыҙыу пункттарына ташылмаған.

Ләкин шуныһы ғәжәп, «Башлесосплав» тресында бындай тревоганы етәксе работниктәр һиҙмәйҙәр, унда һал ағыҙыуға әҙерлек буйынса маҡсатҡа йүнәлешле оператив эш күренмәй. Һал ағыҙыу күләме менән үткән йылға ҡарағанда артыҡ булыуына ҡарамаҫтан, трестә ошо көнгә тиклем техник-ойоштороу саралары планы юҡ.

Яңы навигацияға әҙерлектәге булған етешһеҙлектәр, эште үҙ ағышына тапшырыу — бөтәһе лә үткән йылғы навигация һабаҡтарын «Башлесосплав» тресы етәкселәренең әле иҫкә алмауҙары тураһында һөйләйҙәр.

Н. Ртищев.

Ҡала Советының юбилей сессияһы

Ошо йылдың 5 апрелендә нефтселәр клубы бинаһында Октябрьскийҙең биш йыллығына арналған ҡала Советының юбилей сессияһы булып үтте.

Юбилей сессияһын ВКП(б)-ның ҡала комитеты секретаре депутат иптәш Корольков асты. Сессияла ҡатнашыусылар оҙаҡҡа һуҙылған ҡул сабыуҙар аҫтында башында иптәш Сталин торған ВКП(б) Үҙәк Комитетының политбюро составын почетлы президиумға һайланы.

Октябрьский ҡалаһының биш йыллығы тураһында ҡала Советы исполкомы председателе иптәш Закиров доклад менән сығыш яһаны. Доклад тан һуң Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы председателе урынбаҫары иптәш Кошелев ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының ҡотлау телеграммаһын уҡыны.

Октябрьский ҡала Советының юбилей сессияһы ғәйәт ҙур күтәренкелек менән бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға ҡотлау хаты ебәрҙе.

Ю. Әхмәдиев.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Кинокартиналар регуляр күрһәтелмәй

Совет кешеләренең политик һәм культура кимәлдәрен күтәреүҙә кино бик ҙур ярҙам итә. Ләкин Абзан районында колхозсыларҙы кино менән хеҙмәтләндереү эше бик насар ҡуйылған. Район кинофикация бүлегенең колхозсыларҙы регуляр рәүештә хеҙмәтләндереү өсөн бөтә мөмкинлектәре бар. Киноаппараттар етерлек. Кинокартиналарҙы Главкинопрокаттың Башҡортостан контораһы регуляр ебәреп тора, колхоздарға йөрөү өсөн аттар ҙа бар. Эш нәмәлә һуң? Эш район кинофикация бүлегенең планлы эш алып бармауында һәм работниктәр араһында хеҙмәт дисциплинаһының насар ҡуйылыуында.

Колхозсылар яңы кинокартиналарҙы регуляр ҡарап барырға теләйҙәр. Уларҙың был урынлы һорауҙары ҡәнәғәтләндерелергә тейеш.

Б. Ишкилдин.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Колхоз баҙарҙары үлсәүҙәр менән тәьмин ителһен"

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 40-сы номерында Бәләбәй район үҙәгендәге баҙарҙа колхозсылар тарафынан килтерелгән ауыл хужалығы продукттарын һатыу өсөн ауырлыҡ үлсәүҙәре етешмәүе тураһында хат баҫылғайны.

Бәләбәй район Советы исполкомы редакцияға хәбәр ҙә күрһәтелгән факттар тулыһынса раҫланды, тип белдерҙе. Хәҙер Бәләбәй баҙарында етерлек һанда ауырлыҡ үлсәүҙәре булдырылған. Һуңғы көндәрҙә ауыл хужалығы продукттары менән һатыу итеүҙә бер төрлө лә тотҡарлыҡ юҡ.

ТАСС-тың КИРЕ ҠАҒЫУЫ

4 апрелдә АҠШ-тың вәкилдәр палатаһы председателе Рэйберн вәкилдәр палатаһында, йәнәһе Маньчжурияла «Ҡытайҙың буйһоноусы ғәскәрҙәре» туплана тигән белдереү яһаған. Шунан һуң Американың бер нисә газетаһында, Рэйберн буйынса Маньчжурияла Совет ғәскәрҙәре туплана тигән фекерҙе күҙҙә тотҡан, тигән хәбәрҙәр баҫылып сыҡты.

ТАСС был хәбәрҙәрҙе уйлап сығарылған ялған булғанлыҡтарынан, кире ҡағыу полномочиеһенән алды, сөнки Маньчжурияла бер төрлө лә совет ғәскәрҙәре юҡ.

Бонн хөкүмәтенең террористик саралары айҡанлы Германия коммунистар партияһының белдереүе

БЕРЛИН, 6 апрель. (ТАСС). АДН агентлығы Дюссельдорфтан түбәндәгеләрҙе хәбәр итә.

Демократик ойошмаларға финанс ярҙамы биргән өсөн промышленность һәм бәрәкәтселәрҙе предприятиеларҙы заказдарҙан мәхрүм итеү менән янаһыуы һәм Көнбайыш Германияла күп кенә демократик ойошмаларҙы конституцияға ҡаршы [illegible] характерлаған Аденауэр хөкүмәтенең бойороғо айҡанлы, Германия коммунистар партияһының правлениеһы белдереү яһаны. Был белдереүҙә, Аденауэр хөкүмәтенең бойороғо бөтә демократик принциптарға ҡапма-ҡаршы килә, тип әйтелә. «Ошондай юл менән Аденауэр хөкүмәте, үҙенең [illegible] халыҡтың фекерен һорашыу [illegible] ҡаршы [illegible] баҫымдарын арттырыу [illegible].

Ҡайтанан милитаризациялау арҡаһында [illegible] һуғыш маҡсаттары өсөн [illegible] немец халҡының [illegible] Германия коммунистар партияһы тыныслыҡты һаҡлау [illegible] ойошмаларҙы [illegible]

[illegible]

ойошмалары белдерә: беҙ тыныслыҡ өсөн үҙебеҙҙең көрәшебеҙҙә бер генә аҙымға ла кире сикмәйәсәкбеҙ. Үҙебеҙҙең партия съезы манифесында әйтелгән һүҙҙәрҙе яңынан ҡабатлайбыҙ: «Әгәр ҙә кәрәк булһа, Германия коммунистар партияһы тыныслыҡты һаҡлау һәм милләтте ҡотҡарыу хеҙмәтенә һис бер ҡорбандар алдында ла кире сигенмәйәсәк. Был юл беҙҙең халҡыбыҙҙың тыныслыҡ интерестарына тура килә, һәм шуға күрә ул мөһим, тәҙәгә булып тора һәм ул еңеүгә килтерәсәк».

Үҙебеҙҙең милләт алдындағы яуаплылығыбыҙҙы аңлап беҙ һуғыш теләмәүсе үҙ халҡыбыҙ менән берҙәмбеҙ. Бөтә эшселәр синыфы үҙенең милли ролен аңлаһын һәм, үҙенең бөйөк көсөн файҙаланып, немец халҡын аяуһыҙ атом һуғышынан ҡотҡарһын өсөн, кәрәк булғанын бөтәһен дә эшләйәсәкбеҙ.

Немец халҡы тыныслыҡ теләй. Милли политика тыныслыҡ эшенә хеҙмәт итеүсе, милләттең йәшәүен тәьмин итеүсе һәм халыҡҡа яҡшы тормош тәҙәргә итеүсе политика булырға тейешлеген ул әленән-әле асыҡлап килде. Көнбайыш Германиялағы коммунистар партияһы шундай политика алып бара, ул политика тыныслыҡ һәйкәсе барлыҡ кешеләрҙе, халыҡтың бөтә ҡатламдарын шул тыныслыҡ маҡсатын тормошҡа ашырыуға берләштерергә [illegible].

Коммунистар партияһын ла, тыныслыҡ яҡлап сығыш яһаусы ойошмалар ҙа, [illegible] ҡорҡыуға ҡаршы [illegible] Көнбайыш Германияның [illegible] Аденауэр хөкүмәте [illegible] Уның террористик саралары тыныслыҡ [illegible].

Аденауэр тарафынан үткәрелә торған ҡайтанан милитаризациялау политикаһы законһыҙ һәм енәйәтсе политика ул. Был политика, Германия коммунистар партияһы [illegible] Аденауэр хөкүмәте [illegible] фекерен һорашыу [illegible] Лакин Аденауэр был эшкә тамаҡ [illegible].

Рейнланд-Пфальц өлкәһе немец ирҙәренән һәм ҡатын-ҡыҙҙарынан 32 мең кешенән кем кен эҫенән конституция положениеһенә ярашлы рәүештә, халыҡтың фекерен һорашыу тураһындағы тәҡдимде яҡлап, үҙҙәренең ҡултамғаларын ҡуйҙылар. Һис шикһеҙ, Рейнланд-Пфальц өлкәһе лә, шулай уҡ башҡа бөтә ерҙәрҙә лә халыҡ фекерен һорашыу беҙҙең халҡыбыҙҙың ҡайтанан милитаризациялауға ҡаршы, 1951 йылда ярашыу договоры төҙөү өсөн көрәшергә теләүҙәрен белдереүҙәренә килтерер. Аденауэр һәм уның артында торыусы империалистар шунан ҡурҡалар ҙа. Шуға күрә ул халыҡтың конституция тарафынан билдәләнгән хоҡуҡтарын боҙа. Ул ҡайтанан милитаризациялауға ҡаршы немец халҡының иң ҙур күпселегенең ихтыярын баҫылдырырға иҫәтләй.

Аденауэр законға ҡаршы эш итә, ә шул уҡ ваҡытта Германия коммунистар партияһы бөтә граждандарҙың төп законда әйтелгән хоҡуҡтарын яҡлай».

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

АУЫЛҒА ФӘННИ ЯРҘАМ

Башҡортостандың баҫыусылыҡ тәжрибә станцияһы работниктары яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүгә арналған консультация лекторийҙары төҙөнеләр. Бында күп йылдар [illegible] ауыл хужалығы [illegible].

Бынан башҡа баҫыусылыҡ тәжрибә станцияһының фәнни работниктары колхоздарҙа [illegible] агрономия фәнен пропагандалау тураһында төрлө эштәр [illegible].

Бүздәк районында трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаһы бригадирҙары, баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыусы звеноводтар өсөн ойошторолған курста, баҫыусылыҡ тәжрибә станцияһының [illegible] Федоровка урман полосаларын ултыртыусы техниктар [illegible] тәжрибә станцияһы [illegible] Фарвазов [illegible].

З. Ишбулатов.

Зоотехника түңәрәге яҡшы эшләй

Салауат районы Хаммәтов исемендәге колхозда өс йыллыҡ зоотехника — ветеринария түңәрәге ойошторолған. Был түңәрәкте ветеринар фельдшер иптәш Х. Солтанов етәкселек итә.

Түңәрәктә бөтәһе 23 кеше уҡый. Занятиелар системалы рәүештә программа буйынса алып барыла. Уҡыусылар үткәрелгән дәрестәрҙе яҡшы үҙләштерәләр.

В. Мурзин.

Географияны өйрәнәбеҙ

Мраҡ. Башҡорт педагогия училищеһында ойошторолған география фәнен өйрәнеү түңәрәге яҡшы эшләй. Түңәрәктең 27 члены бар. Бында занятиелар айға 3 тапҡыр үткәрелә. Уҡыусылар был түңәрәккә бик актив ҡатнашалар. Түңәрәк менән география фәне уҡытыусыһы иптәш Волиев етәкселек итә.

М. Булатов.

Алдынғы һунарсы

Йомағужа районы (Ерек ауылы) Бусмаев Яҡуп күп йылдарҙан бирле һунарсылыҡ итә. Ул үҙенең һунарсылыҡ итеү осоронда 43 айыу, 41 бүре үлтерҙе. Быйыл йәнлек тиреләре тапшырыуҙың сезон планын 300 процентҡа үтәне.

Т. Кусмаев.

Тәжрибәле чабан

Хәйбулла районы Сталин исемендәге колхоздың 57 йәшлек чабаны иптәш Йомағужа Байгускаров хеҙмәт өлгөләре күрһәтә.

Иптәш Байгускаров һарыҡ-кәзәләрҙе тәрбиәләп үстереүҙә бөтә көсөн һалып эшләй. Шул һөҙөмтәлә фермала мал һаны йылдан-йыл арта. 1947 йылда бында 293 баш һарыҡ-кәзә бар ине, хәҙер улар 1373 башҡа етте. Быйыл март айына тиклем тағы ла 412 бәрәс алынды.

Ғ. Идрисов.

Өфөлә яҙ. Ҡояшлы, йылы көндәр һуңғы ҡарҙарҙы иретәләр, урамдарҙа хәрәкәт тағы ла йәнләрәк [illegible] Һүрәттә: Өфөнөң Ленин урамында.

М. Әхмәтьянов [illegible]

БӘЛӘБӘЙ РАЙОНЫНДА

Колхоздарҙа төҙөлөштәр

Быйыл әрелләтелгән колхоздарҙа бик күп ҡоролмалар һәм биналар һалына. Бөтәһе 122 урында мал торлаҡтары, 42 урында ярҙамсы предприятие, 365 урында культура-торлаҡ биналары һалынасаҡ. Шул иҫәптән 12 ауыл хужалығы культураһы йорттары төҙөлә.

Бөтә төҙөлөштәрҙең суммаһы 28,5 миллион һум тәшкил итә.

Умартасылыҡтан ике миллион һум доход

Үткән йыл район колхоз умарталығы 2 миллион һумлыҡ доход бирҙе. Колхоз умартасылары Алексеев, Гавчук, Пыжьянов, Файзуллина, Белов иптәштәр һәр бер умартанан 50-шәр килограмм һәм унан да артығыраҡ бал алдылар.

Хәбәрселәр өсөн семинар

Район культура йортонда стена газеталары редакторҙары һәм хәбәрселәр өсөн семинар үткәрелде. Семинарҙа 80-гә яҡын кеше ҡатнашып, улар эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар. Район газетаһы редакторы иптәш Прудникованың: «Коммунистик тәрбиәлә урындағы матбуғаттың роле» тигән һәм ВКП(б) райкомы секретаре иптәш Фроловтың яҙғы сәсеүгә әҙерлек һәм уны үткәреүҙә хәбәрселәрҙең бурысы тураһында докладтары тыңланды.

Фәнни-производство конференцияһы

Бәләбәй ветеринария лабораторияһында зооветеринария эшселәренең-специалистарының фәнни-производство конференцияһы булып үтте. Конференцияның эшендә профессор В. И. Ламский ҡатнашты. Конференцияға әрелләтелгән колхоздарҙың председателдәре лә килгәйне.

Профессор Ламский, «Павлов учениеһе— ветеринарияға» тигән темаға, Башҡортостандың ветеринария фәнни-тикшеренеү институты микробиология бүлегенең мөдире иптәш Саттаров «Биология фәндәре докторы Божьян һәм академик Лепешинскаяның эштәре — мичуринсе биологияға яңы вклад» — тигән темаға лекция уҡынылар.

«Красное знамя» совхозының өлкән зоотехнигы Петухов, М. Горький исемендәге сусҡасылыҡ совхозының өлкән зоотехнигы Кузнецов иптәштәр үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашып сығыш яһанылар.

І.

Әҙәбиәт [illegible]

Педагогия училищеһында «Иптәш [illegible] образы совет художество әҙәбиәтендә» тигән темаға арналған кисә [illegible] Кисә бик күңелле үтте. Әҙәбиәт кабинеты мөдире иптәш Ильясов [illegible] лыдынан һуң уҡытыусылар һәм [illegible] лар рус, башҡорт, татар һәм [illegible] дәрендә Фадеев, Павленко, Суворовский, Джамбул, Баширов, [illegible] һәм башҡа совет яҙыусыларының шағирҙарының әҫәрҙәренән өҙөктәр [illegible] сығыш яһанылар.

1950 йыл йомғағ[illegible]

Ошо көндәрҙә район ауыл [illegible] бүлеге колхоздарҙың 1950 ауыл [illegible] лығы йылына йомғаҡ яһаны. [illegible] ҙың доходтары, 1949 йылға [illegible] 25 процентҡа артҡан. Бер хеҙмәт [illegible] баһаһы натуралата 4 тапҡыр, [illegible] 2 тапҡыр артҡан. Район 1949 [illegible] сағыштырғанда, 1 миллион [illegible] тыҡҡа күберәк игең алған. [illegible] бары тик техник культура [illegible] генә лә 1 миллион 300 мең [illegible] доход алдылар.

К. Аб[illegible]

Йәш стахановсылар конференцияһы

Ошо көндәрҙә ВЛКСМ-дың Өфө ҡала комитеты промышленность предприятиеларе йәш эшселәренең конференцияһын үткәрҙе. Унда 250 алдынғы стахановсы, новаторҙар ҡатнашты.

Конференцияла «Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙең төп юлдары» тигән темаға экономик фәндәр кандидаты иптәш Мирко доклад менән сығыш яһаны.

Фекер алышыуҙа күп кенә стахановсылар сығыш һөйләнеләр.

Конференцияла беренсе һүҙҙе алып, киҙе-мамыҡ комбинатының алдынғы стахановсыһы иптәш Ғәлиева үҙенең инженер Ковалев методы менән эшләүгә күсеүе тураһындағы тәжрибәһе менән уртаҡлашты.

— Был метод менән эшләү һөҙөмтәһендә, — тине ул, — 6 станокты хеҙмәтләндереп, хеҙмәт етештереүсәнлегемде 6,8 процентҡа күтәрҙем һәм норма үтәлеше 120 процентҡа артты.

Сығыш һөйләүселәрҙән паровоздар ремонтлау заводының стахановсыһы иптәш Кузнецов үҙенең эш тәжриб[illegible] уртаҡлашты.

— Металдарҙың технология [illegible] яҡшы белеү бракты кәметә һәм [illegible] сығарыуҙы арттырыуға ярҙам ит[illegible] һөҙөмтәһендә минутына 650 — метр тиҙлек менән метал ҡырҡ[illegible] гәштем, — тине ул.

Рыбкина, Гәрәева иптәштәр [illegible] сығыштарында ҡаланың бөтә [illegible] ләрен май алды ярышына [illegible] реүгә саҡырҙылар.

Р. С[illegible]

Халыҡ-ара күҙәтеү

Парижда бер ай дауам иткән һөйләшеүҙәр

Парижда СССР, Франция, АҠШ һәм Великобритания сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының сит ил эштәре министрҙәре Советы көн тәртибен әҙерләү өсөн саҡырылған әҙерлек кәңәшмәһенең асылыуына 5 апрелдә бер ай тулды. Париж кәңәшмәһенең бер айлыҡ эше нимә күрһәтте һуң?

Билдәле булыуынса, Париж кәңәшмәһенең беренсе ултырышында уҡ Совет делегацияһы сит ил эштәре министрҙәре Советының көн тәртибенә, Германияны демилитаризациялау һәм уның ҡайтанан милитаризациялауыуына юл ҡуймау тураһында Потсдам килешеүенең дүрт держава тарафынан үтәлеүе, Германия менән ярашыу договоры төҙөүҙе тиҙләтеү һәм, шуға ярашлы рәүештә, Германиянан оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыу, Европалағы обстановканы яҡшыртыу һәм дүрт державаның — СССР, АҠШ, Великобритания һәм Францияның ҡораллы көстәрен кәметеү эшенә һис кисекмәҫтән тотоноу кеүек мәсьәләләрҙе индерергә тәҡдим итте.

Был тәҡдимдәрҙе индергәндә Совет делегацияһы шунан сығып эш итте: был мәсьәләләр АҠШ, Великобритания һәм Францияның ҡабалана-ҡабалана ҡоралланыу артынан ҡыуыуҙары менән, шулай уҡ бөтә донъя халҡы күҙ алдында Көнбайыш Германияны асыҡтан-асыҡ ҡайтанан милитаризациялау менән бәйләнгән бөтә Европа халыҡтарының интерестарына ҡағылған иң актуаль һәм киҫкен мәсьәләләр булып торалар. Совет делегацияһы шунан сығып эш итте, был мәсьәләләрҙең тыныслыҡты тәьмин итеү өсөн һәм хәҙерге ваҡытта халыҡ-ара хәлдә булған киҫергәнешлекте бөтөрөү өсөн иҫын-ысынлап серьез әһәмиәте бар.

Шуға ҡарамаҫтан, Көнбайыш державаларҙың вәкилдәре Совет тәҡдимен бик насар ҡаршыланылар. Улар бигерәк тә Германияны демилитаризациялау тураһында Потсдам килешеүенең үтәлешә, Германия менән ярашыу договорын төҙөүҙе тиҙләтеү, Германиянан оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыу һәм дүрт державаның ҡоралланыуын кәметеү кеүек мәсьәләләргә бик ныҡ ҡаршы сыҡтылар. Улар быны урынына мәкерле рәүештә үҙ тәҡдимдәрен үткәрергә тырыштылар. Уларҙың был тәҡдиме тыныслыҡты тәьмин итеү һәм халыҡ-ара хәлде яҡшыртыу тураһында Совет делегацияһы тарафынан алға ҡуйылған төп мәсьәләләрҙе урап үтә. Шуның менән бергә көнбайыш державаларынан береһе лә көн тәртибе тураһында Совет делегацияһы тарафынан индерелгән проектҡа ҡаршы үҙ фекерҙәрен нигеҙләү өсөн күпме лә булһа аҡылға ярашлы дәлил килтерә алманы.

Шуның менән көнбайыш державалар һөйләшеүҙәрҙең беренсе осоронда уҡ шуны күрһәттеләр: улар Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләнең сит ил эштәре министрҙәре Советында ҡаралыуынан ҡурҡалар, уның менән ярашыу договоры төҙөлеүен һәм ул илдән оккупацион ғәскәрҙәрҙең сығарылыуын теләмәйҙәр, улар ҡоралланыуҙы кәметеү тураһындағы мәсьәләнең ҡаралыуынан ҡурҡалар, сөнки был мәсьәләләрҙе тикшереү уларҙың агрессив пландарына удар яһаған булыр ине, ә был державалар үҙ пландарын тормошҡа ашырыу өсөн ҡотороноған рәүештә ҡоралланыу артынан ҡыуалар һәм Германияның армияһын, һәм шулай уҡ Германияның хәрби-экономик потенциалын аяҡҡа баҫтыралар.

Көнбайыш державалар Советтар Союзының аҡылға ярашлы һәм конкрет тәҡдимдәре менән килешергә теләмәгәнлектән, уларҙың кәңәшмәне тупиккә алып инеү ҡурҡынысы булғанлыҡтан, Совет делегацияһы, кәңәшмәгә ҡатнашыусы бөтә делегаттарҙың килешеүенә өлгәшер өсөн көн тәртибенең тәүге проектынан көнбайыш державалар ҡаршы килгән ҡайһы бер пункттарҙы төшөрөп ҡалдырҙы, һәм, киреһенсә, көнбайыш державалар ныҡышмалы рәүештә алға һөргән положениеләр көн тәртибе проектына индерелде. Ә беренсе пунктҡа килгәндә инде, унда Потсдам килешеүе тураһындағы һүҙҙәр халыҡ-ара килешеүҙәр тураһындағы дөйөм һүҙҙәр менән алмаштырылды. Һәм шул уҡ ваҡытта «ҡоралланыуҙың кимәле тураһындағы» мәсьәлә һәм «агрессиянан ҡурҡыуҙы бөтөрөү тураһындағы» мәсьәлә индерелде, көнбайыш державалар уларҙы индереүҙе ныҡышмалы рәүештә тырыштырҙылар.

Ошоноң һөҙөмтәһендә 28 мартта көн тәртибендәге беренсе пункттың Совет делегацияһы тарафынан индерелгән беренсе проекты тапшырылды. Уның өҫтәнлегә шунан тора ине, ул Совет тәҡдимдәренең ҡайһы бер иң мөһим пункттары нигеҙендә, шулай уҡ өс державаның иң мөһим пункттары нигеҙендә төҙөлгәйне. Ул шул уҡ ваҡытта асыҡ һәм конкрет мәсьәләләрҙе үҙ эсенә ала, халыҡ-ара хәлдең көсөргәнешле булыуын бөтөрөү, уларҙы хәл итеүгә бәйләнгән. Әгәр ҙә ҡабул ителһә, совет проекты һис шикһеҙ сит ил эштәре министрҙәре Советының емешле эшләүе өсөн ышаныслы нигеҙ булыр ине һәм был органды бөтә нимә тураһында ла һәм шул уҡ ваҡытта һис бер файҙаһыҙға буш һабырҙау органына әйләндерергә мөмкинлек ҡалдырмаҫ ине.

Ләкин көнбайыш державалар был юлы ла Совет тәҡдимдәрен ҡабул итеүҙән баш тартып, элеккесә уҡ үҙҙәренең һис бер нигеҙһеҙ дәлилдәрен уларға ҡаршы ҡуйҙылар. Кәңәшмәне оҙаҡҡа һуҙыр өсөн, улар Болгария, Румыния һәм Венгрия менән ярашыу договорҙарының үтәлеше тураһындағы мәсьәләне ҡарауҙы ныҡышып башланылар. Гәрсә был өс демократик илгә ҡарата АҠШ менән Англия тарафынан ҡуйылған ялған ғәйептәр — йәнәһе, улар ярашыу договорҙарын үтәмәйҙәр, тигән ялалар Берләшкән Милләттәр Ойошмаһында был мәсьәләләрҙе тикшергәндә бөтә донъя общественносе алдында фаш ителгәйне инде.

Парижда бер ай буйына алып барылған һөйләшеүҙәрҙең йомғағы шуны асыҡ күрһәтә: Советтар Союзы халыҡ-ара хәлде яҡшыртыуҙың иң мөһим шарты булған дүрт держава араһындағы мөнәсәбәтте яҡшыртыуға бәйләнгән барлыҡ мәсьәләләрҙе тикшерергә әҙер. Ә көнбайыш державаларҙың позицияһы бөтә донъяла тыныслыҡ һәм халыҡтарҙың именселеген ныҡытыу хеҙмәтенә һис кисекмәҫтән хәл итеүҙе талап итеүсе халыҡ-ара проблемаларҙы тикшереү эшенә серьез һәм эшмәкәр рәүештә тотонорға теләмәгәнлектәрен күрһәтә. Париж кәңәшмәһендә Советтар Союзы, һәр ваҡыттағы кеүек уҡ, тыныслыҡты яҡлаусы, һуғышты күрә алмаусы, тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе халыҡтарҙың тормош интерестарын яҡлаусы булып сығыш яһай.

Мадридта үҙ-ара һүҙ ҡуйышыу

Америка Ҡушма Штаттарының Кореяға юлбаҫарҙарса һөжүм иткән көндәренән башлап Көнбайыш Европала Америкаға ҡаршы настроениелар бигерәк тә көсәйҙе. Был океан аръяғындағы һуғыш тоҡандырыусылар лагерендә ҙур тревога тыуҙырҙы. АҠШ-тың идара итеүсе түгәрәктәре Франция, Италия һәм Төньяҡ-Атлантик союзда ҡатнашыусы башҡа илдәрҙең халыҡтарын Уолл-стрит магнаттарының бөтә донъяны үҙ империяһына әйләндерергә теләүҙәре хеҙмәтенә һис бер һүҙһеҙ үлемгә барасаҡтар, тип иҫәпләүҙәренең хата булыуына әленән-әле ныҡыраҡ төшөнәләр. Вашингтон үҙ «союзниктарының» сафтарын ҙурайтыу өсөн ныҡлы саралар күрә, бында ул беренсе нәүбәттә Франко Испанияһын күҙҙә тота.

АҠШ-тың государство секретаре Ачесон ошо йылдың февралендә Америка конгрессының сенат комиссияларында сығыш яһап, АҠШ «Испанияны Көнбайыш Европаны оборонлауҙа берҙәм планға индереүгә» өлгәшергә тырыша, тип белдерҙе. Ачесондың ярҙамсыһы Макдермотт үҙ шефының белдереүенә аңлатма биреп, пресс-конференцияла күп мәғәнә аңлатырға тырышып: «АҠШ менән Испания яңы фазаға индеәр» тине.

Хәҙер асыҡланғанынса, Ачесон менән Макдермотт ошо йылдың мартында Франко менән Американың Мадридтағы посолы Гриффис араһында барған һөйләшеүҙәрҙе күҙ уңында тотҡандар. Америка матбуғатының хәбәрҙәренән күренгәненсә, ул һөйләшеүҙәр ваҡытында Франко Испанияһын Төньяҡ-Атлантик союзға ҡушыуҙы формаль яҡтан нисек итеп үткәреү формаһы тураһындағы мәсьәлә тикшерелгән. АҠШ был актты һис бер һүҙһеҙ, союз членларен 12-нән 13-кә еткереү юлы менән генә тормошҡа ашырыуҙан да тартынмаҫ ине. Ләкин Америка-Англия блогының етәкселәренә Испанияла гитлерсе эсәсселәрҙең һәм Муссолини ялсыларының штыктары менән урынлаштырылған фашистик режимға ҡарата Англия, Франция һәм Көнбайыш Европалағы башҡа илдәрҙең халыҡтары кисергән тәрән нәфрәт менән иҫәпләшергә тура килә.

Шунан сығып, АҠШ ошондай бер проект төҙөне, был проект буйынса Франко асыҡтан-асыҡ түгел, ә йәшерен рәүештә Атлантик агрессорҙар менән дуҫлыҡҡа инергә тейеш. Бында һүҙ АҠШ, Испания һәм Португалия араһында өсәүҙең союзын төҙөү тураһында бара. АҠШ менән Португалия Төньяҡ-Атлантиканың членлары булғанлыҡтан, был килешеү Франконы механик рәүештә [illegible] глиянын, Францияның һәм үҙ союзының башҡа членлары «союзник» [illegible] рергә тейеш була. Ә был актҡа [illegible] шикҡә урын ҡалдырмаҫ өсөн, [illegible] Франс Пресс агентлығының хәбәренә ҡарағанда, үҙ өҫтөнә «Атлантика [illegible] ла ҡатнашыусы индәй ҙә булһа [illegible] яһалған һөжүмде үҙ иленә яһалған [illegible] итеп ҡарарға» һәм үндай илгә [illegible] ләрҙең армиялары менән «тулы [illegible] тәшлектә» ҡораллы ярҙам [illegible] әгәр кәрәк була икән, «Пиреней [illegible] на, Көнбайыш Европаға үҙенең [illegible] рен ебәрергә» йөкләмә аласаҡ.

АҠШ үҙ нәүбәтендә Франкоға [illegible] һәм долларҙар менән тәьмин ит[illegible] ҙә биргән. Был һүҙ ҡуйышыуҙың [illegible] рактер алыуы ихтимал. Франконың Вашингтондағы посолы Лекеррика [illegible] журналистарына, Испанияның [illegible] ҡораллы 400 мең кешеһе бар, [illegible] булһа ул 1 миллион самаһы [illegible] кеше бирә ала, тип белдергән. [illegible] тед пресс агентлығының хәбәренә ҡарағанда, Вашингтондағы «хәбәрҙар официаль кешеләр», быны [illegible] ка ите һатып алыу өсөн 300 [illegible] доллар аҡса кәрәк буласаҡ, тип [illegible] ҙар.

Ләкин был һүҙ ҡуйышыуҙы [illegible] лағы һуғыш тоҡандырыусылар [illegible] ҙә булһа еңеллек килтереүе [illegible] Барселонала күптән түгел булған массовый забастовка күрһәткәнсә, [illegible] ния халҡы палач Франконың [illegible] империалистары менән һүҙ ҡуйышыуына ҡаршы, үҙенең демократик [illegible] өсөн, тыныслыҡ өсөн көрәшен [illegible] тере. Испания халҡы Уолл-стрит[illegible] һатырға ирек бирмәйәсәк!

Ю. [illegible]

Редактор Ғ. Ғ. ҒА[illegible]

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01924 Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тираҗы 25.[illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

32-се йыл сыға.

1951 йыл № 70 (8787) 10 апрель шишәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ЯҘҒЫ СӘСЕҮҘЕ ТУЛЫ ӘҘЕРЛЕК ҺӘМ ЯКШЫ ОЙОШКАНЛЫК МЕНӘН УТКӘРӘЙЕК! Н. Ширяев. — Тиҙ һәм яҡшы итеп сәсербеҙ (1-се бит).
Х. Дәүләтшин. — Сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн (1-се бит).
Х. Ғәлимов. — Кондицияһыҙ орлоҡ сәсеүгә иҫәп тоталар (1-се бит).
БАҪЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ. Х. Сафин. — Май алды социалистик ярышы йәйелдерелә (1-се бит).
А. Клементьев. — Ике мең гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды (1-се бит).
ПРОМЫШЛЕННОСТӘ ҺӘМ ТРАНСПОРТТА ЯҢЫ УҢЫШТАРҒА ӨЛГӘШЕҮ ӨСӨН АГИТАЦИОН-МАССОВЫЙ ЭШТЕ КИҢ ЙӘЙЕЛДЕРЕРГӘ (2-се бит).
АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА.
О. Абдулбәкиев. — Башҡортостан крестьяндарына Совет власы нимә бирҙе (3-сө бит).
ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ. Назар Нәжми. — Бабалаһы балаһе (3-сө бит).
В. Ғирфанов. — Ирте сәсергә сәсеү ...рҙа ... (3-сө бит).
Ғ. Ғалин. — Былтырғы ... (3-сө бит).
Италия компартияһының VII съезы йыйылды (4-се бит).
Тыныслык Пакты өсөн (4-се бит).
Норвегия вакиғалары (4-се бит).

Техниканы үҙләштереүгә, производство экономикаһын өйрәнергә

...ил ирекле хеҙмәт иткән халыҡ инициативаһына ... ҙур асыҡлан. Уның шишмәһе ... бетереп түгел. Совет халкы большевиктар партияһы һәм бөйөк Сталин ... артынан армыйл-талмай иҗад итә, ... тормошҡа ашыралар, ... һәм ... [illegible]

... государствоһының йәшәү таңдағы ... В. И. Ленин, «Коммунизм теләге, техниканы ла, фәнде ла алыр... ул» тигәйне. ... [illegible]

... түгел генә Магнитогорск ме... заводы ... ; ... һәм уларҙы ... производстволары ... [illegible]

... Тауар мәшинә ... [illegible]

Бындай көрәш ... стахановсы завод исемен алыу өсөн көрәшә.

...

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советында

1951 йылдың I кварталында Башҡорт АССР-ы райондарының юл эштәре планы үтәлеше буйынса социалистик ярыш йомғаҡтары тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы районлары 1951 йылдың I кварталында юл эштәре планы үтәлеше буйынса социалистик ярыш йомғаҡтарын ... 1951 йылдың I кварталында юл эштәре планын ... районы 101,6 процентҡа ... 177 процентҡа, ...

... күперҙәр тәҙөү һәм капиталь ремонтлау буйынса 428 процентҡа үтәүе менән ... районы (район Советы исполкомы председателе иптәш Каганов, район юл бүлеге мөдире иптәш Шайморҙанов) еңеүсе тип табылды.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы переходящий Ҡыҙыл Байраҡты, ... районына тапшырылды.

ЯҘҒЫ СӘСЕҮҘЕ ТУЛЫ ӘҘЕРЛЕК ҺӘМ ЯКШЫ ОЙОШКАНЛЫК МЕНӘН УТКӘРӘЙЕК!

☆

Сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн

Мраҡ. Күгәрсен районының колхозсылары, механизаторҙары, хеҙмәткәрҙәре һәм уҡыусылары араһында СССР Верховный Советының икенсе сессияһы йомғаҡтарына арналған йыйылыштар, беседалар уҙғарыла.

Мраҡ МТС-ында күп кеше ҡатнашлығында механизаторҙарҙың йыйылышы булып үтте. Уйла СССР Верховный Советының икенсе сессияһы йомғаҡтары тураһында доклад менән МТС директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Хәсәнов сығыш яһаны.

Иптәш Хәсәновтың докладынан һуң, район Советы депутаты, трактор бригадаһы бригадиры иптәш Г. М. Трубицын сығып һөйләне. Ул СССР Верховный Советының икенсе сессияһы тарафынан ҡабул ителгән закондарҙы ысын күңелдән ҡайнар хуплағанлығын белдерҙе һәм быға яуап итеп 1951 йылғы йәйге эш сезонында сәғәт графигы менән эшләп, һәр бер 15 ат көсөлө шартлы тракторға 600-әр гектар ер эшкәртергә һәм 5 процент яғыулыҡҡа экономия яһауға йөкләмә алды.

— Беҙ, механизаторҙар, бөтә совет кешеләре менән бергә, — тине Мраҡ МТС-ы трактор бригадаһы бригадиры иптәш Васильев. — СССР Верховный Советы тарафынан ҡабул ителгән тыныслыҡ тураһындағы Законды ҡайнар хуплайбыҙ. Техниканы тулыһынса файҙаланып, үҙ бригадамдағы тракторсылар менән, быйыл шартлы һәр тракторға юғары сифатлы итеп 600-әр гектар ер эшкәртергә, ремонт средстволарына һәм яғыулыҡҡа 5 процент экономия яһарға вәғәҙә итәм. Унан һуң механик Рыскулов, Русаков һәм башҡа иптәштәр сығыш яһап, конкрет йөкләмәләр алдылар. Механизаторҙар яҙғы сәсеүгә әлгелә әҙерлек менән башлап, МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 12000 гектар майҙандың яҙғы сәсеү планын юғары сифатлы һәм иң ҡыҫҡа срокта үтәргә һүҙ бирҙеләр.

СССР Верховный Советының икенсе сессияһы йомғаҡтарына арналған йыйылыштар «Красный партизан», «Новая жизнь» колхоздарында ла ҙур күтәренкелек менән үтте. Колхозсылар Совет хөкүмәтенең тыныслыҡ политикаһын ысын күңелдән яҡлайҙар. Һәм уға яуап итеп 1951 йылда тотош сәсеү майҙанының һәр бер гектарынан бойҙайҙан уртаса 14 центнер, һолонан — 16, тарынан 10 центнер, орлоҡ участкаһының һәр бер гектарынан бойҙайҙан 16 центнер, һолонан — 17, тарынан 11 центнер урожай үҫтереп алырға һүҙ бирҙеләр.

Х. Дәүләтшин.

☆☆

Тиҙ һәм яҡшы итеп сәсербеҙ

Беҙҙең совхоз коллективы бөтә эске резервтарҙы, мөмкинлектәрҙе ныҡлап өйрәнгәндән, ентекләп иҫәпләгәндән һуң 9 мең гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ культураларын сәсеүҙе 7 — 8 көндә, ә коммунист иптәш Н. Бобков управляющий булған «Баҡлан» бүлексәһе 6 көндә тулыһынса тамамларға тигән ҡарарға килде.

Юғары урожай алыу өсөн алдынғы тәжрибәләрҙе киң ҡулланасаҡбыҙ. 2400 гектар майҙанда бойҙайҙы арҡыры-буй ысулда сәсәсәкбеҙ, 1000 гектар майҙанда ужымды минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрәсәкбеҙ.

Бөтә 8 бригада ла ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы һәм тырматыуҙы, шулай уҡ туңға һөрөлгән ерҙәрҙе тырматыуҙы 2 көндә тамамларға йөкләмә алдылар. Был саралар беҙгә 12500 гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 100-әр бот, 2400 гектар майҙанда 150-шәр бот урожай алырға мөмкинлек бирәсәк.

Тракторҙар, сәскестәр, тырмалар, культиваторҙар һәм яғыулыҡ материалдары күптән әҙер. Баҫыу стандары, вагончиктар ныҡлы тәртипкә килтерелде. Баҫыуҙа дөйөм туҡланыу ойоштороу өсөн етерлек продукт әҙерләнде.

Яҙғы сәсеү осорона ныҡлы уйланған план төҙөлдө һәм ул бөтә бүлексәләрҙә ентекләп өйрәнелде. Беҙгә 4 мең гектар майҙанда ерҙе яҙ һөрөп сәсергә тура киләсәк. Бөтәһе 36 гусеницалы һәм тәгәрмәсле 2 трактор эшләйәсәк. Бына был машиналарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланғанда, һәр бер машинаны ике сменала эшләткәндә генә яҙғы баҫыу эштәренең сроктарын ҡыҫҡартырға мөмкин. Ә бының өсөн беҙҙә кадрҙар етерлек. Беҙ һәр бер тракторға квалификациялы икешәр тракторсы беркеттек. Алдынғы механизаторҙарҙан коммунист Иван Терехов, Иван Булатников, Михаил Липейко, комсомолецтарҙан Николай Астафуров, Николай Терехов һәм башҡа бик күптәр машиналарҙы отлично йөрөтөүселәр иҫәпләнәләр. Улар шулай уҡ комбайндарҙы ла, ремонт эштәрен дә яҡшы беләләр. Уларҙың күпселеге совхозда 10 — 15-әр йыл эшләйҙәр.

Был алдынғы механизаторҙар үҙҙәренең бай эш тәжрибәләрен хәҙер йәш тракторсыларға күсерәләр. Бөтә тракторсылар ҙа машиналарҙы юғары етештереүсәнлеклә файҙаланып, яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн социалистик ярышҡа сыҡтылар. Тракторсы Николай Терехов һәр бер сәскестә смена һайын 40-ар гектар ашлыҡ сәсергә йөкләмә алды. Ул «С—80» тракторына 5 сәскесле агрегат тағып эшләйәсәк.

Совхоз партия ойошмаһы сәсеү осорона политик-массовый эштең конкрет планын төҙөне. 27 агитатор, боевой листоктар һәм стена газеталары сығарыу өсөн 10 редактор билдәләнде. Баҫыусылыҡ бригадаларында бит урынында партия-комсомол группаһы ойошторолдо. Коммунистар һәм комсомолецтар сәсеүҙең хәл иткес участкаларына беркетелделәр. 15 кешенән торған агиткультбригада ойошторолдо. 5 көн һайын бригадаларҙа доклад һәм концерттар үткәреләсәк. Агитбригада өсөн дирекция тарафынан махсус машина бүленде. Вагончиктар өсөн радио приемниктар, библиотекалар, шашкалар, шахматтар һәм аптечка булдырылды.

Партбюро сәсеү осоронда аҙнаға ике тапҡыр бүлексәләрҙә социалистик ярышҡа йомғаҡ яһаясаҡ. Ярышта алдынғылыҡты алған бүлексәгә күсмә Ҡыҙыл вымпел, ә иң алдынғы тракторсыға көн һайын ҡыҙыл әләм бирeләсәк.

Хәҙер совхозда сәсеүгә һуңғы әҙерлектәр алып барыла. Бригадалар үҙҙәренең әҙерлектәрен ҡат-ҡат тикшерәләр, етешһеҙлектәр асылһа, уларҙы шунда уҡ бөтөрөү сараларын күрәләр.

Совхоздың һәр бер эшсеһе сәсеү осорона үҙенең һәм үҙенең бүлексәһенең, шулай уҡ тотош совхоздың нимәй конкрет йөкләмә алғанын яҡшы белә. Быйыл бригадирҙарҙан, агролесомелиораторҙарҙан 35 кеше производствонан айырылмайынса 3 йыллыҡ курсарҙа уҡыйылар. Совхоз коллективы хәҙер бер генә уй һәм теләк — сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта яҡшы сифатлы итеп үткәреү уйы һәм теләге менән генә йәшәй.

Н. Ширяев,
Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозы партия ойошмаһы секретары.

Йөҙ алтмыш гектар костер сәселде

Мәләүеҙ. (Телефон аша). Арслан совхозында (директоры иптәш Синичев) болон-көтөүлек сәсеү әйләнешендә 160 гектар костер үләне сәселде. Совхоздың «Туҡмаҡ» бүлексәһендә трактор баҫыуҙа ер һөрә башланы.

Райондың колхозларында баҫыу эштәре йәйелә. «Красный Октябрь», Трәсип, Салауат һәм Фрунзе исемендәге колхоздар баҫыуҙарҙа аттар менән ер тырматалар. «Новый мир» (председателе иптәш Чернов) һәм «Прибельский» (председателе иптәш Шаров) һәм башҡа колхоздар ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу пландарын үтәнеләр.

Г. Пакуев.

☆

Баҫыу эштәре көндәлеге

Май алды социалистик ярышы йәйелдерелә

Бөрө. (Телефон аша). Калинин исемендәге колхоздың бөтә бригадалары 3 апрелдә баҫыуға сыҡтылар. Баҫыуҙарҙа ҡар һыуҙарын тотоу һәм ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу буйынса иптәш Рифҡәт Гәрәев бригадаһы алда бара. Был бригаданың членддарынан Тәзимә Вилданова, Сафия Нәбиева, Ҡәбиҙә Иосопова иптәштәр көндәлек норманы 150 процентҡа үтәйҙәр. Норманы үтәмәүселәр юҡ. Тәүге 2 көндә колхозда 90 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо.

Фрунзе исемендәге колхоздың баҫыуҙарында 80 кеше эшләй. Иптәш Бәдретдин Шәмсетдинов етәкселек иткән бригада тәүге көндә 40 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотто һәм 20 гектар ужымды өҫтәмә аҙыҡландырҙы.

«Ленинский Октябрь», Буденный һәм Сталин исемендәге колхоздарҙа ла баҫыуҙа тәүге эштәр башланды.

Бөрө районы колхозларында һуңғы ... көндә генә 2000 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо.

Х. Сафин.

Ике мең гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды

Стәрлетамаҡ. (Телефон аша). Баҫыуҙа ҡар һыуҙарын тотоу һәм ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу эштәре ойошторолдо. Һеҙемтәлә районда тәүге ике көндә 1800 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо һәм 2016 гектар ужым сәсеүлектәре өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Баҫыуҙарҙа яҙғы агротехник сараларҙы үткәреүҙә «Игенселәр» колхозы алда бара. Был колхозда 84 гектар майҙанда ҡар һыуҙарын тотоу, 206 гектар ужымды суперфосфат менән өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелде.

«Новая деревня», Шевченко һәм Карл Маркс исемендәге колхоздарҙа ла ҡар һыуҙары тотоу, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу эштәре яҡшы бара.

А. Клементьев.

Болондар һуғарыла

Асҡар. (Телефон аша). Әбйәлил районының колхоз баҫыуҙарында яҙғы тәүге эштәр ҙур ойошҡанлыҡ һәм дәрт менән бара Молотов исемендәге колхозда (председателе иптәш Ғабдуллин, партия ойошмаһы секретары иптәш Миндияров) орлоҡсолоҡ участкаларындағы 90 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Шәйморатов исемендәге колхозда (председателе иптәш Хөснәтдинов, партия ойошмаһы секретары иптәш Сөләймәнов) 75 гектар ужым көл менән аҙыҡландырылды,—көҙҙән һөрөлгән 400 гектар ер тырматылды, бер гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ағастары ултыртылды. Был колхозда һуғарыу корылмаһы бар. Ул быйыл 1000 гектар сәсеүлекте һуғарасаҡ. Хәҙер болондоҡтар һуғарыла. 200 гектар болон һуғарылды инде.

Баҫыуҙарҙа яҙғы тәүге эштәр шулай уҡ Ленин һәм Сталин исемендәге колхоздарҙа ла уңышлы алып барыла. Сталин исемендәге колхозда 1,5 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһында ағастар ултыртылды.

Ғ. Вахитов.

Яҙғы сәсеүгә әҙерлеккә яуапһыҙ ҡараш

Бер нисә көндән Кушнаренко районының колхоз баҫыуҙарында сәсеү эштәре башланасаҡ. Ләкин Димитров исемендәге колхозда яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәре әле булһа тамамланмаған. Яровой ашлыҡтар сәсеү өсөн орлоҡ етешмәй. 712 центнер орлоҡтон 430 центнеры кондицияһыҙ. Ләкин уны сәсеүгә әҙерләү — таҙартыу, елләтеп, ҡояшта киптереү һәм сортлы орлоҡтарға алмаштырыу саралары күрелмәй.

Колхозда 24 һабандың 9-ы, 6 сәскестең 3-өһө, 3 культиваторҙың 2-һе генә ремонтланған. Колхоз тимерлегенең ҡыш буйына эшләмәүе, бикле тороуы, колхоз етәкселәренең ремонт эштәренә яуапһыҙ ҡарауҙарын күрһәтә.

Шулай уҡ агротехник саралар планы ла үтәлмәне. 120 центнер урынына бары тик 22 центнер генә минераль ашламалар ташылып ҡуйылған. Баҫыуҙарға 800 тонна урынына 98 тонна ғына тиреҫ сығарылған. Был колхоз председателе Махияновтың колхоз производствоһы менән насар етәкселек итеүе һәм яуапһыҙ ҡарауының һөҙөмтәһе булып тора.

Сәсеүгә бик аҙ ғына ваҡыт ҡалыуға ҡарамаҫтан, МТС менән колхоз араһында договор ҙа төҙөлмәгән, бригада ла комплектовать ителмәгән әле. 3 тракторҙың колхозға береһе генә килтерелгән. Яғыулыҡ һәм майлау материалдары ла ташылып ҡуйылмаған.

Ф. Имаметдинов.

КОНДИЦИЯҺЫҘ ОРЛОҠ СӘСЕҮГӘ ИҪӘП ТОТАЛАР

Яҙғы сәсеү — юғары урожай өсөн көрәштең иң яуаплы осоро. Уны агротехник сроктарҙа үткәргән ваҡытта ғына юғары урожай алыуға нигеҙ һалынасаҡ.

Дүртөйлө районында 1951 йылдың яҙғы сәсеүенә әҙерлек, үткән йыл менән сағыштырғанда, уңай шарттарҙа башланды. Районда әлек йәшәп килгән 92 ваҡ колхоз 31 эре ауыл хужалығы артеленә берләште. Эреләтелгән колхоздар үҙ сәсеү орлоҡтары менән нигеҙҙә тәьмин ителделәр. Уларҙың күпселеге яҙғы сәсеү өсөн талап ителә торған орлоҡтарҙың 15 — 20 проценте күләмендә страховой фондтар төҙөнөләр. Иәнлә тағыу көстәре өсөн фураж фондтары туплаһылар. Ауыл хужалығы производствоһының техник яҡтан ҡоралландырылыуы артты.

Шуның менән бергә быйыл сәсеү майҙанының, үткән йылдарға ҡарағанда, артыуы, сәсеү майҙанының дүрттән өс өлөшкә яҡыны сортлы орлоҡтар менән генә сәселергә тейеш булыуы, райондың колхоздары алдына, үткән йылдар менән сағыштырғанда, байтаҡ ҡатмарлы бурыстар ҡуя.

Райондың Фрунзе, Крупская һәм Буденный исемендәге алдынғы ауыл хужалығы артелдәре сәсеүгә тулы әҙерлек менән киләләр. Был колхоздарҙа сәсеү майҙанына етерлек сортлы орлоҡтар әҙерләнгән һәм тейешле кондицияға еткерелгән.

Ләкин күп кенә колхоздарҙың председателдәре быйылғы яҙғы сәсеү кампанияһының үҙенсәлектәрен аңлап еткермәнеләр һәм эште үҙ ағышына тапшырҙылар, ә район етәкселәре ҡайһы бер колхоз председателдәренең эшлекһеҙлек күрһәтеү факттары менән килешеп, уларға ҡарата талапсанлыҡты йомшарттылар, эште ойоштороуҙа уларға конкрет ярҙам күрһәтмәнеләр. Колхоздарҙа орлоҡ таҙартыу, киптереү, алыштырыу эштәре даими һәм ныҡлы контроль аҫтына алынманы. Елгәргестәр, сортировкалар, триерҙар тулы нагрузка менән эшләтелмәне. Дымлы орлоҡтарҙы киптереү бик һуңлап башланды һәм сиктән тыш аҡрын темпта алып барылды.

Район колхоздарында сәсеүгә әҙерлектең хәл иткес звеноһы булған — орлоҡ әҙерләү эшләү ҡурҡынысы алдында. Бөтә тәр сәсеү орлоғоноң 50 проценте ҡый үләне орлоҡтарынан таҙартылмаған. Орлоҡтоң 20 проценте түбән сығышлы. 6 мең центнер орлоҡ сәсеүгә бөтөнләй яраҡһыҙ тип табылған. Бөртөклө ашлыҡ культуралары орлоҡтарының яртыһынан күберәк өлөшө юғары дымлылыҡта. Район колхоздары техник культуралар орлоғо менән — 63, үлән орлоғо менән — 18, картоф орлоғо менән — 63 процентҡа ғына тәьмин ителгәндәр.

Районда сәсеү орлоҡтары әҙерләүҙең тревогалы хәлдә булыуы колхоз председателдәрен дә, район етәкселәрен дә бик ныҡ борсорға тейеш ине. Ләкин Дүртөйлө районында бындай борсолоу һиҙелмәй. Дөрөҫ, партияның район комитетында ла, район Советы исполкомында ла теге йәки был колхозда яҙғы сәсеүгә әҙерлектең барышы тураһындағы мәсьәләне әленән-әле тикшереп торалар. Ҡарарҙар ҡабул итәләр. Колхоздарға туҡтауһыҙ һәр төрлө директивалар, отношениелар, телефонограммалар ебәрәләр. Ләкин сығарылған ҡарарҙарҙың үтәлеше өсөн көрәш юҡ. Март айының икенсе декадаһында партияның район конференцияһы асылыу көнө хөрмәтенә иғлан ителгән сәсеү орлоғон әҙерләп бөтөрөү аҙналығы ла тейешле һөҙөмтәләр бирмәне. Был ваҡыт эсендә үҙ сәсеү орлоғо менән тәьмин ителмәгән 14 колхоздан ике колхоз ғына үҙҙәренә етерлек сәсеү орлоғо туплай алды.

Район колхоздарында етешмәгән 3 мең 500 центнер сәсеү орлоғон тулыландырырға бөтә мөмкинлектәр бар. 13 колхозда әле булһа 632 гектар ашлыҡ һуғылмаған. Район етәкселәренең билдәләүе буйынса был ашлыҡтан 4 мең 500 центнерҙан кәм булмаған сәсеү орлоғо алырға мөмкин. Ләкин колхоздарҙа уны тиҙерәк һуғып бөтөрөү сараһы күрелмәне. Калинин исемендәге колхоз сәсеү орлоғо менән 91 процентҡа генә тәьмин ителгән булыуға ҡарамаҫтан, уны тулыландырыу сараһы күрелмәй. 102 гектар ашлыҡ был көнгә тиклем һуғылмай ятҡырыла. «Победа» һәм Сталин исемендәге колхоздарҙың икеһендә 162 гектар һуғылмаған ашлыҡ бар.

Дымлы орлоҡтарҙы киптереү, таҙартыу эше лә ғәфү ителмәҫлек аҡрын темп менән бара. «Урал» колхозы райондың алдынғы ауыл хужалығы артелдәренән иҫәпләнә. Был колхоз сәсеү орлоғо менән тулыһынса тәьмин ителгән тип әйтерлек. Ләкин уның күпселек өлөшө дымлы. 550 центнер бойҙай, 140 центнер һоло, 37 центнер ҡара бойҙай, 16 центнер тары орлоғоноң дымлылығы 19 — 20 процентҡа етә. Өс ай буйына иң бары 250 центнер бойҙай орлоғо ғына киптерелгән. 20 центнер борсаҡ орлоғоноң 18 центнеры бөтөнләй сәсеүгә яраҡһыҙ, 33 центнер орлоҡ етешмәй. Шулай ҙа колхоз етәкселәре (председателе иптәш Ғәбдекәев) етешмәгән орлоҡто табыу сараһын күрмәйҙәр.

Микоян исемендәге колхозда бөртөклө ашлыҡ культураларының күпселеген тәшкил иткән бойҙай һәм һоло орлоҡтарының дымлылығы 20 процент тәшкил итә. Ул ғына ла түгел, 215 центнер бойҙай орлоғо таҙартыла ла башланмаған. 100 центнер һоло, 71 центнер бойҙай орлоғоноң сығышы бик түбән, уны һис киҫекмәҫтән алыштырырға кәрәк. Ләкин бында сәсеү орлоҡтарын эшкәртеү буйынса 4 баҫыусылыҡ бригадаһынан 12 кеше генә эшләй. 12 кеше көнөнә иң бары 8 — 10 центнер генә орлоҡ киптерәләр. Таҙартыуҙа ла бары тик бер триер генә файҙаланыла.

Х. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

ПРОМЫШЛЕННОСТӘ ҺӘМ ТРАНСПОРТТА ЯҢЫ УҢЫШТАРҒА ӨЛГӘШЕҮ ӨСӨН АГИТАЦИОН-МАССОВЫЙ ЭШТЕ КИҢ ЙӘЙЕЛДЕРӘЙЕК!

(Алдынғы агитаторҙарҙың 4—6 апрелдә булып үткән республика кәңәшмәһендә ҡатнашыусыларҙың сығыштары)

Ҡыҫҡа беседаларға мин күберәк иғтибар бирәм

Н. ШАММАТОВ—8 март исемендәге тегеү фабрикаһының агитаторы

Мин агитатор булып дүрт йыл эшләйем. Эшсе ваҡыт эсендә кешеләрҙе тулыһынса әҙерләйем һәм улар менән иң яҡын иптәштәрем булып әүерелделәр. Коллектив һәм индивидуаль беседалар, иптәштәргә йәйләштереү юлы менән мин һәр кешене менән тура тиҙ, хатта эске кисерештәре менән дә танышырға, ярҙам итергә, тәрбиәләргә тырышам. Минең беседаларымды эшселәр түҙемһеҙлек менән көтөп алалар.

Алдынғы эш методтарын таратыу өсөн эшселәр араһында агитация алып барыуға мин айырыуса ҙур әһәмиәт бирәм. А. Чуткин, М. Рожкова, инженер Ковалев методтарын таратыу буйынса үткәргән ыҡымлашыу эш һөҙөмтәһендә беҙҙең тегеү цехында стахановсылар-ударниктарҙың һаны ике тапҡыр артып, хәҙер улар цехта һаны 87 процентен тәшкил итә. Цехта нормаһын үтәмәүсе эшселәр һаны кәмене, хеҙмәт дисциплинаһы нығыны, эшселәрҙең 37 проценте тик иң юғары сифатлы ғына продукция бирәләр, машиналарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алыу киң йәйелдерелде, цех 1 Май алды стахановсы вахтаһына баҫты.

Үҙемдең эшемдә мин ҡыҫҡаса беседалар үткәреүгә ҙур урын бирәм. Минең күпселек беседаларым 25—30 минутҡа ғына иҫәпләнгән булалар. Ҡыҫҡаса беседалар үткәреү өсөн айырыуса яҡшы әҙерлек менән барыу талап ителә, сөнки аҙ ғына ваҡыт эсендә иң мөһим мәсьәләләрҙе күтәрергә, уларҙы тыңлаусыларға тулыһынса аңлатып, йәнле фекер алышыу ойоштороп өлгөрөргә кәрәк. [illegible] Газета, «Агитатор блокноты» һәм башҡа сығанаҡтарҙан алынған материалдарҙы тапып, теманы тулыһынса аңларға, уның буйынса дөрөҫ һәм ныҡлы фекер бирергә тырышам, үҙ фабрикабыҙ, цехыбыҙ тормошонан алынған конкрет фактар менән байытам. [illegible]

Беҙҙең цехта рус телен аңламаусы эшселәр ҙә бар. Улар өсөн мин туған телдә айырым беседалар үткәрәм. Шулай итеп, бер генә эшсене лә агитациянан ситтә ҡалдырмау өсөн көрәшеүҙе мин үҙемдең алдыма төп бурыс итеп ҡуйҙым.

Газета материалдарын мин нисек файҙаланам

В. КЛОБУКОВ—агитатор, Черниковск ҡалаһы 1-се номерле ТЭС монтеры

Газета — агитаторҙарҙың эшендә ҙур таяныс. Ул агитаторҙарға көндәлек эште алып барыуҙа ярҙам итә. Тыңлаусыларҙың иғтибарын ниндәй мәсьәлә тирәһендә туплларға һәм уларҙы көндәң төп бурыстарына нисек йүнәлтергә кәрәклеген күрһәтә.

Беседа алдынан мин газетаны ҙур иғтибар менән уҡып сығам, ундағы иң төп һәм көндәлек бурыстарға яуап биргән мәсьәләләрҙе табам.

Газетаны уҡығанда, мин нимәгә бигерәк тә ҙур иғтибар бирәм һуң?

Газетала баш мәҡәлә иң әһәмиәтле материал булып тора. Ул һәр ваҡыт бөгөнгө көндәң иң мөһим бурыстарына арналған була. Баш мәҡәләне уҡығанда мин илебеҙ алдында торған төп бурыстар менән танышам һәм уларҙы тыңлаусыларға еткерәм, яңылыҡты, алдынғы эш тәжрибәләрен күтәреп алырға ярҙам итәм.

Газета аша мин тыңлаусыларҙы халыҡ-ара хәл менән таныштырып торам. Ҡайһы бер ваҡытта газеталар һуңлап килә, шуға күрә ағымдағы ваҡиғаларҙан артта ҡалмаҫ өсөн мин радио тапшырыуҙарын тыңлайым.

Илебеҙҙең тормошо тураһындағы хәбәрҙәр менән таныштырғанда, мин тыңлаусыларҙың иғтибарын үҙебеҙҙең электростанция алдындағы бурыстарға бәйләнгән мәсьәләләргә йүнәлтәм.

Коллектив газета уҡыуҙы ойоштороу тәжрибәм тураһында бер нисә һүҙ әйтергә кәрәк. Коллектив газета уҡыу — ябай ғына эш түгел. Беҙҙең электростанция агитаторҙарының эш тәжрибәһе коллектив газета уҡыуҙың агитаторҙарҙан ҙур оҫталыҡ һәм ныҡ әҙерлек талап иткәнен күрһәтте.

Газетаны мин 15—20 кешенән артмаған коллектив алдында уҡырға тырышам. Коллектив бәләкәйерәк булһа, уҡыу уңышлыраҡ үтә. Ҡайһы саҡта газета уҡыуҙы үткәреү эшен тыңлаусыларҙың араһынан берәр кешегә тапшырам, ә үҙем иғтибар менән тыңлап ултырам һәм уҡылған материалды аңлатып биреүҙә ярҙам итәм.

Агитаторҙар, ҡайҙа ғына эшләһәләр ҙә, газетаны масса араһына күберәк индерергә тейештәр, сөнки газета — массаны ойоштороу, идеологик тәрбиәләү өлкәһендә көслө ҡорал ул. Газетаны ни тиклем яҡшыраҡ файҙаланһаҡ, илебеҙҙә коммунизм төҙөү эшенә шул тиклем уңышлыраҡ ярҙам итәсәкбеҙ.

Агитатор—производствоны ойоштороусы

А. ЖЕРНЯКОВ—Ишембай нефть эшкәртеү заводы агитаторы

Политик агитация — беҙҙең партиябыҙҙың иң көслө ҡоралдарының береһе. Беҙ быны яҡшы аңлайбыҙ. Шуға күрә, агитацияның бөтә формаларын ҡулланып, хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эште бөтә киңлеге менән алып барабыҙ.

Завод партия ойошмаһы эргәһендә 55 кешенән торған агитколлектив эшләй. Агитаторҙар араһында завод етәкселәре, инженер-техник работниктәр, алдынғы стахановсылар бар.

Мин агитаторлыҡ эшен план буйынса алып барам. Планды һәр ай башында төҙөйөм. Беседаларға ныҡлы әҙерләнеп, алдан конспект яҙып килә. Аңлашылмаған мәсьәләләр осрағанда, йыш ҡына белемлерәк иптәштәргә мөрәжәғәт итәм. Үткәргән бөтә беседаларымды эшселәр алған социалистик йөкләмәне һәм государство программаһын срогынан алда үтәүгә йүнәлдерәм. Заводта оборудованиеләрҙең хеҙмәт итеү срогын оҙайтыу буйынса хәрәкәт башланғас, мин станоктарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алыу һәм уның ниндәй ҙур файҙа биреүе тураһында күп кенә беседалар үткәрҙем. Был беседалар ыңғай һөҙөмтә бирҙеләр. Хәҙер бөтә эшселәр ҙә станоктарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алдылар. Был миҫалдарҙан агитаторҙың производствола көслө ойоштороусы икәнен аңлау ҡыйын түгел.

Һүрәттә: Промышленность һәм транспорт агитаторҙарының республика кәңәшмәһендә ҡатнашыусы Стәрлетамаҡ ҡалаһы агитаторҙарынан бер төркөм.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Көндәлек дәфтәр—агитация эшенең көҙгөһө

З. ӘХМӘТОВ—Өфө киҙе-мамыҡ комбинаты агитаторы

Мин агитатор булып эшләй башлағас та, үҙемә беркетелгән кешеләр менән булған тәүге осрашыуымды уларҙың көнкүреш һәм тормош шарттары менән танышыуға, эштән буш ваҡыттарын нисек үткәреүҙәрен асыҡлауға, китап һәм газета-журнал уҡыу-уҡымауҙарын билдәләүгә арнаным.

Мин эшләгән сменала йәштәрҙән комсомол члены булған бер генә кеше лә юҡ ине. Шуға күрә эшселәрҙә коллектив алдында яуаплылыҡ һиҙеү, һәр эшкә государство интерестарынан сығып баһалай белеү сифаттарын тәрбиәләүҙе үҙемдең беренсе бурысым итеп ҡуйҙым һәм тәүге беседаларым өсөн «Дуҫлыҡ һәм иптәшлек», «Культура һәм холоҡ», «Краснодон геройҙары», «Комсомолдың производстволағы роле» тигән темаларҙы һайланым.

Был темаларға беседалар үткәргәндән һуң мин эшселәрҙе производство мәсьәләләрен тикшереүгә яҡшыраҡ ылыҡтыра башланым һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, оборудованиене һаҡлауға, социалистик ярышты йәйелдереүгә, отлично сифатлы продукция эшләп сығарыуға, сырьеға экономия яһауға, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуға һәм башҡа мәсьәләләргә бәйләнгән темаларға ныҡыраҡ иғтибар бирә башланым.

Партбюро ярҙамында йәштәр өсөн ВЛКСМ Уставын өйрәнеү түңәрәге ойошторҙом. Хәҙер беҙҙең сменалағы алдынғы йәш эшселәрҙән 15 кешене ВЛКСМ сафына алдыҡ һәм сменала комсомол группаһы төҙөнөк. Комсомолецтар производство мәсьәләләрен хәл итеүҙә һәм ойоштороу сараларын үткәреүҙә актив ҡатнашалар. Коллектив алдында торған иң мөһим мәсьәләләр профсоюз һәм комсомол ойошмаларының йыйылыштарында ҡарала. Был уңыштар агитацион-массовый эште йәйелдереүҙең асыҡ һөҙөмтәһе булып тора.

Мин, агитатор булыуым сифатында, үткәргән һәр эшемде иҫәпкә алып барыу өсөн көндәлек дәфтәр булдырҙым. Көндәлек дәфтәр үткәрелгән эштәрҙе күҙгә күреү күрһәтә һәм уларға анализ яһарға ярҙам итә. Мин көндәлек дәфтәргә үҙемдең айырым эшселәргә ҡарата булған фекерҙәремде лә яҙам, уларҙағы килешһеҙ һәм матур һыҙаттарҙы күрһәтәм, яҡшы сифаттарын үҫтереү өсөн әҙләкһеҙ тәрбиә эше алып барам. Билдәле ваҡыттан һуң, был эшсенең үсеш юлын күҙәтеп, уның хәҙерге көнөн тәүге көндәре менән сағыштырып ҡарағанда, һоҡланырлыҡ һөҙөмтәләр күренә. Көндәлек дәфтәр миңә халыҡ араһында агитацион-массовый эш алып барыуҙа алған тәжрибәмде нығытып, уны тағы ла йөкмәткелерәк, һөҙөмтәлерәк итергә мөмкинлек бирә.

Мин нисек агитатор булдым

М. ЗАРИПОВ—Белорет „Автотрактородеталь" заводының агитаторы

Заводтың партия һәм комсомол ойошмаһы ышаныс күрһәтеп, миңә коллективта агитаторлыҡ эшен алып барыуҙы йөкмәтте. Агитатор алдында торған ҙур бурысты аңлап, мин иң элек үҙемдең политик белемемде үҫтереү өҫтөндә эшләй башланым һәм, үҙ алдыма уҡыуҙан тыш, цехта ойошторолған политик түңәрәккә уҡырға индем. Ләкин былар ғына минең өсөн аҙ ине әле. Илебеҙҙең эске тормошо һәм халыҡ-ара хәл менән һәр ваҡыт танышып тормайынса, агитация эшен алып барыу мөмкин түгел. Шуға күрә газета-журналдар минең көндәлек уҡытыусыларым булып әүерелделәр.

Агитатор производствола иң алдынғы эшсе булырға тейеш. Быны мин башта уҡ яҡшы аңлап алдым һәм үҙемдең хеҙмәт етештереүсәнлегемде күтәреү өсөн бөтә көсөмдө биреп көрәшә башланым. Ныҡышмалы эш һәм уҡыу һөҙөмтәһендә мин маҡсатыма ирешә алдым — ике йылдан бирле заводтың иң алдынғы эшселәре сафында торам.

Беренсе беседамды мин «Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрергә, етештереү тиҙлеген өҙлекһеҙ үҫтерә барырға» тигән темаға үткәрҙем. Был беседаға алдан яҡшылап әҙерләндем. Уны үҙемдең цехымдағы айырым иптәштәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өҫтөндә нисек эшләүҙәре тураһындағы асыҡ факттар менән байыттым. Шул уҡ ваҡытта алдынғылар кимәленә күтәрелергә теләгән кешеләрҙе лә күрһәттем. Иҫке эш нормаларын емереп яңы нормаларҙы яулауға тотҡарлыҡ яһаған сәбәптәрҙе астым. Яҡшы әҙерләнгән беседа, тыңлаусылар араһында ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Ҡайһы бер эшселәр эшкә ҡамасаулыҡ иткән етешһеҙлектәрҙе астылар. Миңә цех начальнигы аркылы был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә ярҙам итергә кәрәк булды.

Мин ай һайын 3-4 беседа үткәрәм һәм көн аша эшселәр алдында ҡыҫҡырып газета уҡыу ойоштором. Коллективта уҡылырға тейеш булған мәҡәләләрҙе мин алдан уҡып, аңлашылмаған ерҙәрен асыҡлап ҡуям. Тәүҙә беседаға йәки газета уҡыуға ҡалырға теләүселәр аҙ булды. Ләкин беседаларҙы систематик рәүештә үткәреп, унда ҡатнашыусы эшселәрҙе илебеҙҙең эске эштәре һәм халыҡ-ара хәл менән таныштырып торғас, эшселәр ҡыҙыҡһына башланылар. Хәҙер минең беседаларымда сменалағы бөтә эшселәр ҙә ҡатнаша.

Минең эшемдә күргәҙмә пособиеләрҙең булмауы бик ҙур тотҡарлыҡ яһай. Улар булһа, беседалар күңеллерәк үтер ине һәм тыңлаусыларға ла аңлайышлы булыр ине.

Беҙҙә ҡала агитаторҙарының эш тәжрибәләрен уртаҡлашыу кәңәшмәләре бик һирәк үткәрелә. Был етешһеҙлектәрҙе бөтөргәндә беҙҙең агитаторҙар үҙҙәренең эшен тағы ла яҡшыраҡ ойоштора алырҙар ине.

Промыслала агитацион-массовый эш

ТАДЭЙКО—„Туймазынефть" тресы 1-се номерле промыслаһының партбюро секретаре

Беҙҙең промысла партия ойошмаһының агитацион-массовый эше, бөтәһенән элек, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүгә, Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталинға яҙған хатында алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн социалистик ярышты артабан йәйелдереүгә, промысланың техник-экономик күрһәткестәрен яҡшыртыуға, нефть сығарыуҙы арттырыуға һәм коллективта хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт һәм, Тыуған ил алдындағы патриотик тойғоһо тәрбиәләүгә йүнәлтелгән.

Промыслала нефть скважиналарының бер-береһенән алыҫ булыуы, эштең өс смена менән алып барылыуы уҙған йылда беҙҙә агитколлективтең эшен ер-яңынан ойошторорға мәжбүр итте. Сөнки агитацион-массовый эште дөрөҫ ойоштороу ғына тейешле уңыш бирә ала.

Бығаса тиклем беҙ агитаторҙар ни тиклем күп булһа, агитация эше шул тиклем яҡшы булырға тейеш, тип уйлап агитаторҙарҙың һанын арттырырға тырыша торғайныҡ. Практика беҙгә быны киреһен күрһәтте. Беҙҙең шарттарҙа агитаторҙарҙың һаны күп булған һайын, улар менән етәкселек итеү ауырлаша, ә ҡайһы берҙә көндәлек мәсьәләләрҙе бөтә агитаторҙар менән бергә хәл итеү мөмкин дә булмай. Шуға күрә беҙ агитколлективтең составын яңынан ҡараныҡ, агитаторҙарҙы яңыса урынлаштырҙыҡ. Хәҙер агитаторҙарҙың һаны аҙыраҡ, ә уларҙың әҙерлек кимәлдәре юғарыраҡ.

Беҙҙең агитколлективта агитаторҙар ике төркөмгә бүленгән — уларҙың береһе агитацион-массовый эште тура-нан-тура производствола, ә икенсеһе, халыҡтың йәшәгән урынында үткәрелә. Был ике тармаҡтың һәр береһендә үҙҙәренә генә хас булған үҙенсәлектәр бар, шуға күрә уларҙа агитация эшен айырым алып барғанда һәр береһенә конкрет етәкселек итергә һәм уларға айырым маҡсатҡа йүнәлешле тематикалар һайларға мөмкинлек тыуа.

Предприятиеләрҙә агитация эшен ойошҡанлыҡ менән алып барыу маҡсатында, ВКП(б)-ның ҡала комитеты агитаторҙар өсөн аҙнаға айырым бер көн билдәләне. Был—тыңлаусыларға агитация үткәрелә торған көндө алдан белеп торорға, агитаторҙарға занятиеға алдан ныҡлап әҙерләнеп килергә, ә партбюроға агитаторҙарҙың эшенә оператив контроль урынлаштырырға мөмкинлек бирҙе. Билдәләнгән көндә ҡаланың бөтә эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре эштән һуң ҡалып агитаторҙар үткәргән беседала ҡатнашалар. Беҙҙең промыслала ундай беседалар участкаларҙың, цехтарҙың үҙҙәрендә үткәрелә.

Беседалар алдынан агитаторҙар өсөн семинарҙар үткәрәбеҙ. Ул семинарҙарҙа агитаторҙар үҙҙәре уҙғарған һуңғы беседа буйынса эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар һәм яңы темаға лекция тыңлайҙар. Ошондай бер семинарҙа 1951 йылға СССР Государство бюджеты тураһында лекция уҡылды. Лекциянан һуң агитаторҙар участкаларҙа, цехтарҙа һәм бригадаларҙа беседа үткәрҙеләр. Был беседалар яҡшы һөҙөмтә бирҙеләр. Миҫалға агитатор иптәш Мөхәмәтшин үткәргән беседаны алырға мөмкин. Унда бюджетты өйрәнгәндән һуң слесарҙар һәм операторҙар пландан тыш мөмкин тиклем күберәк аҡса туплауға ирешеү маҡсатында, нефть сығарыуҙы арттырыу өсөн үҙ участкаларының резервтарын иҫәпләй башланылар. Операторҙар участкала нефть скважиналарын тикшереү йомшаҡ ҡуйылыуын билдәләнеләр, ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе күрһәттеләр. Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Улар эшселәрҙең юғары аңлылығы, үҙ производстволарының эше өсөн яуаплылыҡ һиҙеүҙәре тураһында һөйләйҙәр. Шулай итеп, агитаторҙарҙың политик беседалары производстволағы етешһеҙлектәрҙе тапҡыс күҙлегенән сығып тикшереүгә әүерелде. Беҙ шуға күрә лә агитаторҙарҙан үҙҙәренең беседаларын урындағы фактик материалдарға, промысланың, ҡаланың һәм бөтә илебеҙҙең тормошона бәйләп үткәреүҙәрен талап итәбеҙ.

Күргәҙмә промысла булараҡ, беҙҙең промысла алдында нефть промышленносенә яңы техника индереү, ул техниканы рационализация һәм уйлап табыуҙар иҫәбенә байытыу буйынса ҙур яуаплылыҡ тора. Был бурысты уңышлы үтәү өсөн 1950—1951 йылдарҙа агитколлектив байтаҡ эш эшләп башҡарҙы. Промыслала техник темаларға систематик лекциялар, семинарҙар, техника көндәре үткәрелә. Агитаторҙар рационализаторлыҡ тәҡдимдәрҙең һәм уйлап табыуҙарҙың әһәмиәте, был өлкәләге яңылыҡтар тураһында беседалар үткәрҙеләр. Был саралар рационализаторҙарҙың һанын 20 кешенән 70 кешегә тиклем арттырҙы. Уларҙың араһында 40 кеше ябай эшселәрҙән. Рационализаторҙар 102 тәҡдим индерҙеләр, уларҙың эсенән 65-е производствоға индерелгәндән һуң 1092 мең һум экономия бирҙе.

Агитаторҙар бер операторҙың бер скважинаны хеҙмәтләндереүҙән бер нисә скважинаны хеҙмәтләндереүгә күсеүенә коллективте мобилизациялауҙа ҙур роль уйнанылар. Был эш коммунист Дёмина һәм Толстых иптәштәрҙең инициативаһы менән башланды. Улар беренсе булып дүрт фонтан скважинаһын хеҙмәтләндерә башланылар. Агитаторҙар был башланғысты өйрәнгәндән һуң бөтә операторҙар араһында беседа үткәрҙеләр. Хәҙер промысылағы бөтә операторҙар ҙа өсәп дүртәү тиклем девон скважинаһын хеҙмәтләндерәләр.

Агитация эшендә эшселәр йыйылышы ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Был йыйылыштарҙа политик мәсьәләләр һәм производство мәсьәләләре ҡарала. Йыйылышта ҡуйылған мәсьәләләрҙе тикшереүҙә эшселәр актив ҡатнашалар. Һөҙөмтәлә уларҙың политик кругозоры күтәрелә, эште государство интерестарынан сығып хәл итергә ынтылыу тыуа.

Агитация эше беҙҙең промыслаға биш йыллыҡ планды һәм 1951 йылдың 1 квартал планын уңышлы үтәп сығырға ярҙам итте. Башҡортостан нефтселәре икенсе йыл инде Баку нефтселәре менән булған социалистик ярышты башлап ебәреүҙә инициатор булдылар. Был беҙҙең алдыбыҙға тағы ла ҙурыраҡ бурыс ҡуя, агитацион-массовый һәм ойоштороу-партия эштәрен яңы юғарылыҡҡа күтәреүҙе талап итә.

БЕҘҘЕН АГИТАТОРҘАР

Ш. НӘБИУЛЛИН—Өфө [illegible] оборудованиеләре заводы партбюро секретаре

Беҙҙең агитколлектив 65 [illegible]ра, шуларҙың 42-һе коммунист. [illegible]торҙар үҙҙәренә йөкмәтелгән эште намыҫ менән башҡаралар.

Коммунист иптәш Емельянов модельщик булып эшләй. Ул уҡыуы түңәрәге менән етәкс[illegible] һәм шул уҡ ваҡытта ҡойоу [illegible] агитаторлыҡ эше алып бара. Емельянов быйыл цехта 12 бе[illegible] көрҙе, 22 тапҡыр ҡысҡырып уҡыу ойошторҙо. Һәр бер беседаһы әҙерлек менән килә, газета-журнал политик һәм художестволы әҙәбиәт ҡуллана. Ул үткәргән беседа[illegible] эшселәрен производство програм[illegible] срогынан алда үтәү өсөн көрә[illegible]ландыралар. Иптәш Емельянов—[illegible]сы, нормаһын 250 — 300 про[illegible] үтәп, башҡаларҙы ла фиҙакәр [illegible] ойоштора. Ҡойоу цехы ғинуар һәм [illegible]раль пландарын арттырып үтәп[illegible]

Мастер иптәш Андрианов — [illegible]һыҙ агитатор. Уға энергетиктар [illegible]ла агитацион-массовый эш алы[illegible] тапшырылды. Иптәш Андриано[illegible] политик һәм производство [illegible] аҫтәлекле күп кенә беседалар [illegible]. Уның цехта электр энергияһына [illegible]мия яһау тураһындағы беседа[illegible] яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Энерге[illegible] ғинуар һәм февраль айҙарында [illegible] киловатт-сәғәт электр энергияһы[illegible] номия яһанылар. Иптәш Андриано[illegible]нең политик белемен күтәреү [illegible] систематик эшләй, «ВКП(б) [illegible] ҡыҫҡаса курсын» үҙ алдына [illegible]ланмы рәүештә лекцияларға йөрө[illegible].

Йыйнау цехында иптәш Белов [illegible]тор булып эшләй. Ул эшселәр [illegible] регуляр рәүештә 25—30 минутлы[illegible] литинформациялар һәм беседалар [illegible] Коллективта ҙур авторитет [illegible]лана.

Коммунизмдың бөйөк төҙөлештәре[illegible]каҙлар үтәүсе цехтарҙа агитацион-[illegible]вый эштәр һуңғы ваҡытта [illegible] яҡшырҙы. Уны тейешле [illegible] ҡуйыу һөҙөмтәһендә, завод [illegible] Куйбышев гидроэлектр станцияһы [illegible] заказды срогынан алда үтәне.

Партбюро агитаторҙар өсөн [illegible] бер тапҡыр семинар үткәрә. Систе[illegible] рәүештә тәжрибәләр уртаҡлашыу [illegible]мәләре үткәрелә. Агитаторҙар [illegible]нан теге йәки был темаға беседа[illegible] нисек үткәреү һәм ниндәй әҙәбиәт [illegible]ланыу тураһында күрһәтмәләр а[illegible]торалар. Агитаторҙарҙың эше [illegible] иҫәпкә алып барыла. Быныһ өсөн [illegible] журнал булдырылды.

1950 йыл планын завод 120 про[illegible]ко үтәне. Быйыл да ғинуар һәм [illegible] айҙарының планы байтаҡ арт[illegible] үтәлде. Ә квартал планы тауар про[illegible]цияһы буйынса срогынан 10 [illegible] тамамланды. Беҙ хәҙер дүрт айлыҡ [illegible] изводство программаһын 21 [illegible] үтәү өсөн көрәшәбеҙ.

Беҙҙең завод Өфө ҡалаһы предприя[illegible]ләре араһында май алды социалис[illegible]тик ярышы инициаторы булды. [illegible] 1 Майҙы лайыҡлы ҡаршылау өсөн аги[illegible]цион-массовый эш бөтә киңлеге [illegible] йәйелдерелде.

Агитациянын маҡсатҡа йүнәлешле булыуы өсөн

М. ПЛАЧЕНКОВ—Өфө паровоздар ремонтлау заводы йыйнау цехының агитаторы

Мин үҙ беседаларымдың йөкмәтке[illegible] тыңлаусылар өсөн аңлайышлы булы[illegible] өлгәшергә тырышам.

Эшселәр менән айырым беседалар [illegible]реү бик ҙур әһәмиәткә эйә. Сөнки [illegible] беседа һәр бер эшсене тәрән өйр[illegible] эшендәге етешһеҙлектәрҙе асыҡлау[illegible]ҙам итә.

Мәҫәлән, токарь иптәш Прокудин [illegible]дәлек эш нормаһын үтәй алмай ие[illegible]ның төп сәбәбе — уның үҙ эшен [illegible] биреп еткермәүендә һәм үҙ эшенә [illegible] мнәтеп аңламауында булып сыҡты[illegible] уның менән ныҡышмалы эш [illegible]. Иң элек илебеҙҙең промышленно[illegible] ҙур уңышлыҡтар, коммунизмдың төҙөлештәре, алдынғы эшселәр һәм [illegible]торҙар тураһында беседалар үткәрҙе[illegible] һәр бер беседамда күтәрелгән мәсьәлә[illegible] үҙебеҙҙең заводтың, цехтың, иптәш [illegible]кудиндең үҙенең эшенә бәйләп ал[illegible]ҙым. Айырым эшселәрҙең үҙ нормаларын үтәүе ниндәй ҙур әһәмиәт тотҡаны[illegible]һәттем. Һөҙөмтәлә иптәш Прокудин [illegible]изводство заданиеһен систематик [illegible] арттырып үтәй башланы.

Яҡшы ойошторолған күргәҙмә [illegible]дар беседаларҙы йөкмәткеле, тыңлаусы[illegible] өсөн аңлайышлы итеп үткәреүгә [illegible] итә. Шуға күрә мин алдынғыларҙың тәжрибәләрен, юғары сифат күр[illegible]тәрен, хеҙмәт дисциплинаһын [illegible]ҙың һөҙөмтәләрен һәм башҡа мәсьә[illegible]ҙе сағылдырған плакаттарҙы файҙаланыуға ла ҙур иғтибар бирәм.

Агитаторҙарға ярҙамға

БАШҠОРТОСТАН КРӘҪТИӘНДӘРЕНӘ СОВЕТ ВЛАСЕ НИМӘ БИРҘЕ

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы Башҡортостан хеҙмәтсәндәрен политик, экономик һәм милли иҙеүҙән азат итте. Башҡорт халҡы, Советтар Союзының башҡа халыҡтары кеүек үк, ирекле һәм бәхетле тормош юлына баҫты.

Башҡортостандың бөлгөнләнгән ваҡ һәм артта ҡалған ауыл хужалығы сталинсе биш йыллыҡтар осоронда социалистик ҙур ауыл хужалығына әйләнде. Сталинсе ауыл хужалығы артеле Уставы буйынса республикабыҙҙың колхоздарына мәңгелеккә файҙаланыу өсөн 7.150 мең гектар ер бирелде. Был — Бөйөк Октябргә тиклем ярлы һәм урта хәлле крәҫтиәндәр ҡулындағы ер майҙанынан ике тапҡырға яҡын артыҡ.

Башҡортостан колхоздарын хеҙмәтләндереү өсөн беренсе класлы техника менән ҡоралланған 140 МТС төҙөлдө. Бынан башҡа, республикала 51 совхоз бар. Улар 900 мең гектарҙан күберәк ер майҙанын һәм күп һанда тракторҙарҙы, комбайндарҙы биләйҙәр.

Йөҙәрләгән колхоздар, бөтә МТС-тарҙың яртыһынан күберәге һәм 41 совхоз электрлаштырылған.

Башҡортостан баҫыуҙарында меңәрләгән тракторҙар һәм комбайндар эшләй. Һуңғы ике йыл эсендә генә МТС һәм совхоздар 3 мең самаһы ҡеүәтле гусеницалы тракторҙар, 1 меңгә яҡын комбайн, 700-ҙән артыҡ ҡатмарлы молотилка, меңәрләгән трактор һабандары, сәскестәре һәм башҡа ауыл хужалығы машиналары алдылар.

Башҡорт ауылында яңы специалистар — комбайнерҙар, трактористар, механиктар, агрономдар, зоотехниктар, электриктар барлыҡҡа килде.

Хәҙер республикабыҙҙың ауыл хужалығында юғары агротехника ҡулланыла. Ауыл хужалығы фәненең новаторҙары колхоз производствоһына мичуринсе фән ҡаҙаныштарын индерәләр һәм ауыл хужалығы культураларын эшкәртеүҙең алдынғы агротехникаһына эйә булыуҙа колхозсыларға ярҙам күрһәтәләр.

Башҡортостанда баҫыусылыҡ өсөн дә, малсылыҡ өсөн дә бик уңайлы тәбиғи шарттар бар. Киң яландар һәм тау-урман участкалары миллионлаған баш мал аҫрарға мөмкинлек бирә. Республикабыҙҙың колхоздарында 13 меңдән артыҡ малсылыҡ фермаһы бар. Малдарҙың тоҡомо һәм продукт биреүсәнлеге яҡшыра бара. Һуңғы дүрт йыл эсендә колхоздарҙа аттар һаны 13,2 процентҡа, мөгөҙлө эре малдар — 36,7 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләр — 37 процентҡа, сусҡалар һаны ике тапҡырҙан күберәккә артты.

Колхоз һәм совхоз производствоһы күп тармаҡлы хужалыҡ булып үҫә. Баҫыусылыҡ һәм малсылыҡ менән бер рәттән, баҡсасылыҡ, йәшелсәселек һәм башҡа тармаҡтар индерелә.

Республикабыҙҙың Урал арты районларында элек көтеү малсылығы ғына өҫтөнлөк алып тора ине. Хәҙер бында колхоздар эре бөртөклө ашлыҡ хужалығын, йәшелсәселек һәм баҡсасылыҡты үстерәләр. Республикабыҙҙың сағыштырмаса ҙур булмаған был өлөшө революцияға тиклем бөтә Башҡортостан биргән күләмдә йәшелсә һәм емеш бирә.

Учалы районының «Красный партизан» колхозының даны бөтә республикаға таралған. Артелдә 800 баш ат, 750 быйыр, мең ярым баш һарыҡ, умарталыҡ, ҙур ҡошсолоҡ фермаһы, ярҙамсы 18 предприятие, шул иҫәптән таҡта ярыу, быйма баҫыу, столярный мастерскойҙар, кирбес заводы һәм башҡалар бар. Шулай уҡ, Өфө районының «Труд», «Завет Ильича», Бөрө районының «Березовый ключ», Баҡалы районының «Красный пахарь» ауыл хужалығы артелдәре лә ҙур уңышҡа өлгәштеләр.

Башҡортостан колхоздары һуғыш алдынан уҡ сортлы орлоҡтар менән сәсеүгә күскәйнеләр. Бөртөклө ашлыҡ теүмә сәскестәр менән һәм яровизацияланған орлоҡтар менән генә сәселә. Йыл һайын 1.800 мең гектарға яҡын ер туңға һөрөп ҡалдырыла. Ужым культуралары бөтөнләй тиерлек апрель һәм май айҙарында һөрөлгән иртә парға сәселә. Күп һанда урындағы һәм минераль ашламалар ҡулланыла. Сәсеү әйләнештәрен үҙләштереү тамамланып килә.

Башҡортостан баҫыуҙарының уңышлылығы йылдан-йылға күтәрелә. Үткән йыл мул урожай үстерелде. 1950 йылдың 12 октябрендә беҙҙең республикабыҙ государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда үтәүе тураһында иптәш Сталинға рапорт бирҙе. Тыуған илебеҙгә 1949 йыл менән сағыштырғанда, 13 миллион 500 мең ботҡа артыҡ иген, шул иҫәптән, 8 миллион бот бойҙай тапшырылды. Колхозсылар хеҙмәт көндәренә мул доход алдылар.

Республикабыҙҙа игенселектең гүзәл мастерҙары үҫеп сыҡты. Банат Батырова, Инна Саламатина, Василий Салонин, Ғиниәт Насиров кеүек юғары урожай мастерҙары теләһә ниндәй ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға һәм йыл һайын яҡшы урожай үстерергә өйрәнделәр.

Сталинсе биш йыллыҡтар йылдарында Башҡортостанда ауыл хужалығы уҡыу йорттарының һәм тәжрибә учреждениеларының селтәре байтаҡ үҫте. Хәҙер республикала 8 тәжрибә станцияһы бар. Уларҙа 102 ғилми работник ауыл хужалығының төрлө тармаҡтары буйынса тикшеренеү эштәре алып баралар. Ауыл хужалығы институты уңышлы рәүештә агрономдар, зоотехниктар, урман специалистары, ветеринар врачтар һәм инженер-механизаторҙар әҙерләп сығара. 7 ауыл хужалығы техникумында 1600 студент уҡый. Республиканың ауыл хужалығы органдарында, МТС һәм колхоздарында 1270 агроном, 750 зоотехник, 410 ветеринар врач һәм фельдшер эшләй.

Иҫке ауыл хәҙер юҡ инде. «Уның урынына общественный хужалыҡ ҡаралтылары, клубтары, радио, кино, мәктәптәре, библиотекалары һәм яслелары менән, тракторҙары, комбайндары, автомобилдәре, молотилкалары менән яңы ауыл майҙанға килә» (И. В. Сталин. Ленинизм мәсьәләләре, 457—458-се биттәр).

Ялҡынлы йылдар эсендә совет Башҡортостанының ауыл хужалығы танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. СССР Министрҙәр Советының һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының ҡарарына ярашлы рәүештә Башҡортостанда тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу буйынса бөйөк Сталин планы тормошҡа ашырыла. Ялан районҙарының бөтә баҫыуҙары баҫыу һаҡлаусы урман полосалары менән уратып алына. Хәҙер бөтәһе 265,6 мең гектар майҙанда ағас ултыртылған. [illegible] 4 баҫыу һаҡлау станцияһы төҙөлдө, 5 мең гектарҙан артыҡ баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртылды.

Колхозда хеҙмәт намыҫ, батырлыҡ һәм геройлыҡ эше булып әйләнде. Башҡортостандың күп меңләгән колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының күкрәген Советтар Союзының ордендары һәм миҙалдары биҙәй. [illegible] Социалистик Хеҙмәт Геройҙары [illegible].

Башҡортостан крәҫтиәндәре [illegible]

Беҙҙең илебеҙ [illegible]

Сталинсе биш йыллыҡтар осоронда Совет Башҡортостанының социалистик ауыл хужалығы [illegible]

О. Абдулбәкиев,
Мәжит Ғафури исемендәге Башҡортостан тел, әҙәбиәт һәм тарих ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотруднигы.

Иртә сроктарҙа сәсеү һәм дөрөҫ сәсеү нормалары ҡулланыу өсөн

Дөрөҫ сәсеү сроктары, сәсеү нормалары һәм сәсеү ысулдары ҡулланыу, орлоҡтарҙы юғары сифатлы итеп сәсеү һәм дөрөҫ күмдереү — былар бөтәһе лә орлоҡтарҙың ерҙән берҙәм һәм тиҙ шытып сығыуын, шытып сығыу проценты юғары булыуын, тулыһынса һәм көслө тамырланыуын, яҡшы башаҡланыуын тәьмин итәләр.

Яҙғы культураларҙы сәсеү сроктары

Яҙғы культуралар сәсеү сроктарына ҡарата иртә һәм һуң сәселә торған культураларға бүленәләр. Иртә сроктарҙа сәселә торғандарына: яҙғы бойҙай, һоло, арпа, борсаҡ, етен, шәкәр сөгөлдөрө, көнбағыш, төрлө үләндәр, горчица, рыжик кеүек культуралар һәм мал аҙығы тамырҙары; һуңлап сәселә торғандарына: тары һәм ҡара бойҙай культуралары инә.

Иртә сроктарҙа сәселә торған культураларҙың орлоғо 1-5 градус йылылыҡтағы температурала шытып сығалар һәм уларҙың шытымдары ҡыҫҡа сроклы яҙғы ҡырауҙарға бик тиҙ бирешмәйҙәр.

Ергә сәселгән орлоҡтар шытып тамырланһын өсөн һөрөнтө ҡатламында, бигерәк тә уның өҫкө 1-10 сантиметр ҡатламында етерлек дым запасы булыуы шарт. Иртә яҙ ерҙә бындай дым запасы һәр ваҡыт күп булыусан. Бурыс — ошо дым запасын йәш шытымдар өсөн тулыһынса файҙаланып ҡалыуҙан тора. Быға яҙғы культураларҙы мөмкин тиклем иртә сроктарҙа сәсеү аша ирешеп була.

Берҙәм һәм тулыһынса шытыу өсөн орлоҡтарҙың күмелеү ҡатламында етерлек йылылыҡ булыу ҙа төп шарт булып тора. Бигерәк тә, яҙғы бойҙайҙы етерлек йылынып етмәгән һәм артыҡ һыуыҡ тупраҡҡа сәскәндә, уның урожайы һәр бер гектарға 2 — 2,5 центнерға тиклем кәмей.

Бөтә иртә яҙғы культураларҙы мөмкин тиклем ҡыҫҡа сроктарҙа сәсергә кәрәк. Күп кенә тәжрибәләр сәсеүҙе 5—10 көнгә һуңлатыу урожайҙы бермә-бер кәметеүҙе күрһәтә.

Яҙғы культураларҙы ҡыҫҡа сроктарҙа сәсеү Башҡортостандың бөтә районлары өсөн дә бер тигеҙ әһәмиәтле һанала. Ҡыҫҡа сроктарҙа сәсеү ялан районларында, бигерәк тә ҡоролоҡҡа ҡаршы көрәшеү яғынан әһәмиәтле булһа, Белорет, Бөрйән кеүек тау-урманлы районларҙа ҡыҫҡа срокта сәсеү, ашлыҡтарҙы көҙгө иртә һалҡындарҙан һаҡлау яғынан әһәмиәте бик ҙур.

Стәрлетамаҡ тәжрибә баҫыуы Башҡортостандың ҡоролоҡло ялан районларын, Бөрө тәжрибә баҫыуы — дымлы урманлы ялан районларын характерлайҙар. Быларҙың береһендә яҙғы бойҙайҙы иртә срокта сәскәндә (1945 — 1949 йылдар тәжрибәләренән уртаса урожайы) һәр бер гектарҙан 13,4 центнер урожай алынған. Сәсеү башланғандың бишенсе көнендә сәскәндә — урожай 3,3 центнерға йәки 27,6 процентҡа, 10-сы көндә сәскәндә —4,4 центнерға йәки 32,9 процентҡа, 20-се көнендә сәскәндә—8,2 центнерға йәки 61,2 процентҡа тиклем кәмегәнлеге беленгән. Бөрө тәжрибә баҫыуында ла һуңлап сәсеү шундай уҡ һөҙөмтә биргән.

Майлы культуралар һәм, бигерәк тә күп йыллыҡ үләндәрҙе мөмкин тиклем иртә һәм ҡыҫҡа сроктарҙа сәсергә кәрәк. Мәҫәлән, клевер йәки люцерна үләндәрен сәсеү менән 2-3 көнгә һуңлағанда, уларҙың ҡоролоҡло йылдарҙа бөтөнләй шытып сыҡмауҙары мөмкин. Көнбағышты сәсеү эше менән 5-10 көнгә һуңлау уның урожайын 30-40 процентҡа кәметә һәм бындай көнбағыш урожайы төрлө ауырыуҙар һәм ҡоротҡостар менән ныҡ зарарлана.

Тары һәм ҡара бойҙай орлоҡтары шытыу өсөн тупраҡтың өҫкө ҡатламында температура 8 градус һәм бынан да юғарыраҡ булырға тейеш. Уларҙы, беҙҙең Башҡортостан шарттарында, йылдың килешенә ҡарап, 25 майҙан алып 5 июнгә тиклем ваҡытта сәсеү яҡшы була.

Сәсеү ысулдары

Тупраҡҡа сәселгән һәр бер орлоҡ мөмкин тиклем бер тигеҙ аҙыҡланыу майҙаны алып торорға тейеш. Был ваҡытта баҫыуҙағы һәр бер үҫемлек ҡояш нурҙары менән тулыһынса һәм үҙ-ара мөмкин тиклем бер тигеҙ файҙаланасаҡ һәм һәр бер үҫемлек ерҙең һәр бер квадрат сантиметрынан максималь урожай бирәсәк.

Бының өсөн һәр бер орлоҡтоң мөмкин тиклем тиҙ шытып сығыуҙарына һәм уларҙың бер тигеҙ, көслө һәм ныҡ булып үҫеүҙәренә ирешергә кәрәк. Быға ирешеү өсөн барынан да элек, орлоҡтарҙы ергә бер тигеҙ итеп бүлеү талап ителә. Орлоҡтар бер урында өйөлөп ятһалар, икенсе урында һирәк булһалар, бындай баҫыуҙан яҡшы урожай көтөргә ярамай. Сөнки ҡуйы сәселгән ерҙә нәҙек һәм зәғиф үҫемлектәр үҫәсәк, улар тиҙ ҡибәсәктәр, ваҡ башаҡлы буласаҡтар. Һирәк таралған орлоҡтарҙан көслө үҫемлектәр үҫә, ләкин улар туҡланыу майҙанын барыбер тулыһынса файҙалана алмаясаҡтар һәм уларҙы ҡый үләндәре баҫып һәләк итәсәк.

Һәр бер орлоҡ бөртөгөн тупраҡтың етерлек еүешлектә булған ҡатламына урынлаштырырға кәрәк була. Барлыҡ орлоҡтар ҙа бер тигеҙ тәрәнлектә күмдерелергә тейеш, был уларҙың берҙәм үҫеүҙәренән тыш, бер тигеҙ өлгөрөүҙәрен дә тәьмин итәсәк.

Орлоҡтарҙы ергә күмдереү — сәсеүҙең төп агротехник талаптары бына шунан тора.

Был талаптарҙы барыһы тик орлоҡто сәскес машиналар менән сәсеү генә тәьмин итә ала. Ҡул менән сәсеү был талаптарҙы үтәй алмай һәм ул, сәскестәр менән сәсеүгә ҡарағанда, 15-20 процентҡа кәм урожай бирә, ә орлоҡ 10-15 процентҡа артыҡ тотола, сәсеү эше һуҙыла.

Арҡыры-буй ысул менән сәсеү. Юғары урожай мастерҙары бөртөклө ашлыҡ культураларын яңыса, теүмә сәскестәр менән арҡыры-буй итеп сәсеү ысулын киң ҡулланалар. Был ысул менән сәсеү урожайҙы бик ныҡ күтәреүҙе тәьмин итә.

Арҡыры-буй сәсеүҙең агротехник өҫтөнлөгө шунда, был ысул менән сәскәндә ерҙең бөтә майҙаны урожай алыу өсөн тигеҙ файҙаланыла.

Киң рәтле итеп сәсеү ысулдары. Бер нисә культураны, мәҫәлән, шәкәр сөгөлдөрө, көнбағыш, тары кеүек культураларҙы киң рәтле итеп сәсергә тура килә. Орлоҡтарын тиҙерәк етештереү маҡсатында күп йыллыҡ үләндәрҙе лә киң рәтле итеп сәсергә мөмкин.

Киң рәтле итеп сәсеү бер нисә агротехник бурысты үтәй: сәселгән культураны етерлек туҡланыу-аҙыҡланыу майҙаны менән, ҡый үләндәренә ҡаршы көрәшеүҙе тәьмин итә, тамырҙары өсөн (мәҫәлән, шәкәр сөгөлдөрө һәм картоф өсөн) бөтә уңайлы үҫеү шарттары тыуҙыра.

Һәр бер культура буйынса рәт араһы төрлөсә киңлектә сәселә. Мәҫәлән, тары культураһын 30—45—55 сантиметр, көнбағышты 55—65 сантиметрҙан да тар рәтле итеп сәсергә ярамай. Төп ҡағиҙә шунда: рәттәр мөмкин тиклем тура һыҙыҡлы булырға һәм рәт араларын систематик рәүештә йомшартып торорға тейеш.

Сәсеү нормалары

Һәр бер культура буйынса конкрет сәсеү нормаһын билдәләү өсөн күп кенә шарттарҙы иҫәпкә алырға кәрәк. Төп шарт булып, теге йәки был районың, колхоздың ниндәй климатик һәм тупраҡ шарттарында йәшәүе иҫәпләнә.

Миҫал өсөн Дәүләкән һәм Дыуан районларын алайыҡ. Был ике төрлө тәбиғәт шарттарында ашлыҡтар ике төрлө шарттарҙа үҫәләр. Дәүләкәндә, мәҫәлән, бөртөклө яҙғы культуралар 10—11 көндә шытып сығалар һәм уларҙың дөйөм шытып сығыуы 80 процент самаһы була. Дыуан районында орлоҡтар тиҙ тигәндә 14—15 көндә, күп кенә ваҡытта 17—20 көндә шытып сығалар һәм дөйөм шытып сығыуҙары 60—70 проценттан артмай. Бына ни өсөн Дыуанда һәр бер гектарға 160—180 килограмм яҙғы бойҙай, 140—160 килограмм көҙгө арыш сәсергә тура килә. Дәүләкәндә сәсеү нормаһы һәр бер гектарға яҙғы бойҙай 120—140 килограмм, көҙгө арыш 120—140 килограмм итә.

Был положениеларҙы дөйөмләштергәндә түбәндәгесе килеп сыға: Башҡортостандың ҡоролоҡло ялан районларында иң түбән нормалар менән, үҙәк урман-ялан районларында — уртаса, төньяҡ, төньяҡ-көнбайыш районларында — күтәренке, төньяҡ-көнсығыш һәм тау-урман районларында иң юғары сәсеү нормалары ҡулланырға кәрәк була.

Былар төп принциптар. Бынан тыш, сәсеү нормалары һәр бер районда һәм һәр бер колхоз шарттарында тағы ла конкретлаштырылған булырға тейештәр. Мәҫәлән, баҫыу дым менән етерлек тәьмин ителгән һәм уның уңдырышлылығы ла күтәренке булғанда, сәсеү нормаһы артығыраҡ итеп алынырға тейеш. Участкала ҡый үләне күп булғанда, бындай ерҙәргә ҡуйыраҡ итеп сәсергә кәрәк. Орлоҡтоң абсолют ауырлығы (грамм иҫәбе менән 1000 бөртөк ауырлығы) күтәренке булғанда уның үлсәм нормаһы (гектарға килограмм иҫәбе менән сәсеү нормаһы) күтәренкерәк булырға тейеш. Сәсеүҙең һуңғы көндәрендә ҡуйыраҡ итеп сәсергә тура килә. Бөртөклө ашлыҡ культураларын теүмә сәскестәр менән арҡыры-буй итеп сәскәндә йәки тар рәтле сәскестәр менән сәскәндә сәсеү нормаһын, теүмә ысул менән сәсеү нормаһына ҡарағанда, 15—25 процентҡа артығыраҡ итеп алырға кәрәк.

Юғары урожай мастерҙары бөртөклө ашлыҡ культураларын мөмкин тиклем ҡуйыраҡ итеп сәсергә тырышалар һәм шуның менән байтаҡ артыҡ урожай алыуға өлгәшәләр. Мәҫәлән, республикабыҙҙың алдынғы колхоздары 1949 йылда 15 — 25 центнер бойҙай урожайы алыу өсөн арҡыры-буй ысул менән сәсеп, һәр бер гектарға сәсеү нормаһын 15 — 20 процент артыҡ ҡулландылар. Өфө районы Фрунзе исемендәге колхозда 1950 йылда һәр бер гектарға 140 килограмм яҙғы бойҙай сәсеү урынына 160 килограмм сәсеү аша һәр бер гектарҙан 2,5 центнер өҫтәмә урожай алыуға өлгәштеләр.

Шулай итеп, алдынғылар сәсеү нормаларын дөрөҫ ҡулланыуға айырыуса ныҡ иғтибар итәләр.

В. Ғирфанов,
Башҡортостан ғилми-тикшеренеү баҫыусылыҡ станцияһының ғилми сотруднигы.

Газетала баҫылмаған материалдар буйынса

Хужалыҡ эшен өҙөүселәргә сара күрелде

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы редакцияһына Оло Теләк районы «Алға» колхозы етәкселәренең хужалыҡ эштәре менән етәкселек итмәүҙәре һәм общественный малдарҙы үрсетеүгә иғтибар бирмәүҙәре тураһында хәбәр килгәйне.

Был хәбәрҙә күрһәтелгән фактар ВКП(б)-ның Оло Теләк район комитеты тарафынан тикшерелеп тулыһынса дөрөҫ, тип табылды.

Ауыл хужалығы артеленең хужалыҡ эштәре менән насар етәкселек иткәне өсөн бригадир М. Фәлләтдинов эшенән бушатылған. Бында булған етешһеҙлектәрҙе тулы асыу һәм ғәйепле кешеләргә сара күреү маҡсатында ауыл хужалығы артеленең эшмәкәрлегенә тиҙ көндә документаль ревизия үткәреләсәк.

Тәнҡит һәм библиография

Ҡабаланыу бәләһе

Сталинсе биш йыллыҡтарҙа беҙҙең республикабыҙ Тыуған илебеҙҙең бер ҙур индустриаль районына әйләнде, «Икенсе Баку» үҙәге булып күтәрелде. Ҙур төҙөлештәр һәм республикабыҙҙың йөҙөн көндән-көн үҙгәреүе, промышленность һәм ауыл хужалығы новаторҙарының хеҙмәте, уларҙың Социалистик Хеҙмәт Геройҙары булып үҫеүҙәре башҡорт совет әҙәбиәте алдына яңы бурыстар ҡуя һәм башҡорт совет яҙыусыларынан шул төҙөлештәрҙе күтәреүсе кешеләргә, хеҙмәт геройҙарына лайыҡлы булған әҙәби әҫәрҙәр тыуҙырыуҙы талап итә.

Ошо ҙур бурыстарҙы үтәү ниәте менән шағир Маҡсуд Сөндәклә үткән йылда, республикабыҙҙың Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Банат Батырова тураһында «Алтын йондоҙло ҡатын» тигән ҙур шиғырҙарын һәм Аҡмал Вахитов тураһында «Тынысльҡ юлы» тигән поэмаһын яҙҙы һәм һуңғыһын «Ҡыҙыл таң» газетаһында баҫып сығарҙы. Шулай итеп, М. Сөндәклә республикабыҙҙың Социалистик Хеҙмәт Геройҙары хаҡында әҫәр яҙырға тотоноусыларҙың иң беренсеһе һәм был башланғысты хупламай үтеү мөмкин түгел.

«Тынысльҡ юлы» поэмаһына тиклем уҡыусылар шағирҙең «Хеҙмәткә дан» китабы һәм «Маҡар Малай» поэмаһы менән танышҡайнылар. Китап та, поэма ла ыңғай баһа алғайны. Китап та, поэма ла, М. Сөндәклә ижадына хас булған темаға, күбеһенсә, Донбасс шахтерҙары тураһында яҙылғайны. Шағир шул тормошто, уның кешеләрен яҡшы белеү арҡаһында, улар тураһында поэтик образдар һәм тулыҡанлы [illegible] йырланы. Һуңғы поэма ла, «Маҡар Малай» кеүек үк, үҙенең хеҙмәте, новаторлығы менән илгә билдәле булған, әле тормошта йәшәгән кеше тураһында яҙылған. Әҫәрҙең төп идеяһы, эстәлеге һәм әһәмиәте тураһында иһә исеме үк әйтеп тора — «Тынысльҡ юлы». Шағир үҙенең поэмаһында, совет кешеләренең һуғыштан һуңғы тынысльҡты нығытыу өсөн көрәше — ул һуғыш йылдарында фронтта һәм тылда булған көрәштең дауамы, совет кешеләре ерҙәге бөгөнгө тынысльҡты көрәштә һәм хеҙмәттә яулап алдылар, тигән фекерҙе алға һөрә һәм быны художестволы образдарҙа, айырым алғанда поэманың төп геройы Аҡмал Вахитов аша күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Ул үтәне ҡайнар дәрт менән
Үҙ өҫтөнә алған бурысын.
Һәр уңышы һайын эшендә
Нығый барҙы ерҙә тынысльҡ, —

ти шағир Аҡмал Вахитов тураһында һәм уны автор турапан-тура производствола, хеҙмәттә күрһәтә. Шағир үҙе өҫтөнә бик ҙур һәм яуаплы бурыс алған. Ә быны ул нисек хәл иткән һуң? Асыҡтан-асыҡ әйтергә кәрәк: Маҡсуд Сөндәклә, шағир булараҡ, үҙ эшенең мастеры кимәлендә, маҡсатына ирешә алмаған. Дөрөҫ, поэмала хәтерҙә ҡалырлыҡ поэтик образдар,— Ишембай тураһындағы сағыштырыуҙар, Аҡмал Вахитовтың ләһи тураһындағы үйҙары һәм шулай уҡ, авторҙың Аҡмал тураһындағы лирик сигенеүҙәре, ләһи Сталин һәйкәле тураһында яҙылған юлдары һәм башҡалар бар. Ләкин былар ғына әҫәрҙең төп достоинствоһы була алмайҙар.

Алда беҙ, Аҡмал Вахитовты автор турапан-тура производствола, эш өҫтөндә күрһәтә тинек. Скважинала авария — поэма шунан башлана ла. Эш нәмәлә? Шағир әйткәнсә, «бөтә нәмә йоморо клапанда». Клапан төҙәтелә — Аҡмалдың беренсе подвиге ошо хеҙмәттә күренә. Аҡмалдың хеҙмәте менән уҡыусы икенсе тапҡыр бер төндә, сәғәт дүрткә тиклем ултыртып, эскиз һыҙыуҙа таныша. Быны Аҡмалдың производстволағы новаторлығы тип алайыҡ. Ошо ике подвиг Аҡмал образын характерлаған сығанаҡтар булып тора.

Ер аҫты эштәре ремонты мастеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Аҡмал Вахитов үҙенең хеҙмәт подвигтары менән билдәле кеше. Ул инде хеҙмәт геройы булып, һәр кешенең алдында йәшәй. Әгәр ҙә кешегә хеҙмәт геройы исеме бирелгән икән, тимәк ул ҙур хеҙмәт подвигтары эшләгән тигән һүҙ һәм Аҡмал Вахитовты халыҡ шундай итеп күҙ алдына килтерә лә. Ә поэмала алынған ошо ике подвиг тормошта Аҡмалды герой итә аламы? Әлбиттә, итә ала. Бәлки ысынбарлыҡта шулай булғандыр ҙа. Авария булдырмау, булған хәлдә лә уны тиҙ төҙәтеү, производствола новаторлыҡ — һис шикһеҙ ҙур подвигтар. Бына шул подвигтар поэмала нисек бирелгән һуң?

Авариянан һуң клапандарҙы төҙәтергә кәрәк, бөтә көс шуға һалына. Мастерҙар ҙа, операторҙар ҙа, геолог та, горком секретары Темошин да шул хаҡта айырым беседа үткәрә — бер һүҙ менән әйткәндә, бөтә Ишембай шул клапан ҡайғыһы менән йәшәй. Халыҡ клапан тураһында яна, поэма иһә 600 юлға һуҙыла бирә. Шунан һуң инде поэманың геройы Фомич Аҡмалға әйтеп һала:

Пассынты мәңге эшләрлек
Төҙәтеп бирҙем һиңә мин бөгөн.

Шулай итеп, быға тиклем булған борсолоуҙар, ығыуҙар автор тарафынан индерелгән яһалма мәшәҡәт булып ҡына ҡала.

Икенсе патент поэмала былай баяндала: төн. Аҡмал эскиз яһай. «Ә балалар тора ҡарап ҡайһы урындыҡ, ҡайһы бишектән». Шунан һуң инде «Түңәрәкләп ҡуйҙы үҙенсә ҙур булмаған ике тәгәрмәс» ти автор. Эскиз әҙер. Аҡмал йоҡлай алмай.

«Күҙен йомһа, уның алдында
Ҡауҙәләнде оҙон беләктәр.
Тәгәрҙастар геүләп әйләнде
Тырнайҙылар тимер терһәктәр».

Быныһы инде Аҡмалдың новаторлығы.

Хәҙер «тимер терһәктәрҙе», Аҡмал һыҙған тәгәрмәстәрҙе заводта эшләйҙәр, ул нәмәне маҡтайҙар, эшкә егәләр һәм Маҡсуд Сөндәклә былай тамамлап ҡуя:

«Ҡара поршень һоро таштарға
Һөйләй төҫлө Аҡмал уңышын» (!).

Поэманың бишенсе бүлеге һуғышта Совет Армияһының еңеүенә һәм халыҡтар менән бергә Аҡмалдың да Стокгольм Воззванияһына ҡул ҡуйыуына арналған. Шуның менән поэма тамамлана.

Ошо миҫалдарға ҡарағанда, Аҡмал Вахитовты художестволы образ кимәленә күтәреү өсөн автор тейешле художество сараларын таба алмаған. Бөтә нәмә еңел, бик тиҙ хәл ителә, бер төрлө лә хеҙмәт киҫерғәнешлелеге, тырышыу, ҡаршылыҡтар юҡ. Шуның өсөн дә төп образ үҫмәй, уҡыусыны ышандырырлыҡ түгел һәм ул дөйөмләштерелгән, тамамланған образ кимәленә күтәрелмәгән. Был поэманың беренсе төп етешһеҙлеге.

Поэманың икенсе төп етешһеҙлеге булып образларҙың асыҡ булмауы, уларҙың береһен береһенән айырып булмауы тора. Бында кешеләр урынына уларҙың вазифалары ғына йөрөй. Мәҫәлән, Темошин менән Гулин — береһеһе горком секретары, икенсеһе геолог, ә инде Трофим быларҙан үҙенең оператор булыуы менән генә айырыла. Шуныһы ҡыҙғаныс, һәр бер герой менән беҙ һүҙ ыңғайында ғына, авторҙың әйтеп китеүе арҡаһында ғына танышабыҙ. Мәҫәлән, Темошин образын алайыҡ. Беҙ уның менән башта бына нисек танышабыҙ: «Горком секретары Темошин һикертәсәк уны усында» (әйтерһең, Темошин Геркулес!) һәм был, юғарыла әйткәнсә, һүҙ ыңғайында ғына хәтергә алына. Беҙ уның исемен поэманың башҡа урындарында бына шулай күрәбеҙ: «Һейләй төҫлө уға Темошин» (Аҡмал уйлай), «Горком секретары Темошин үҙе үткәрә бөтөн беседа», «Горком секретары Темошин атлап үтә залдың түренә», «Йыйылыш асыҡ тине Темошин», «Потолок тыңлай уны Темошин» (Аҡмалды). Һорау тыуа, ниндәй кеше һуң ул Темошин? Нисек һейләшә, матурмы, йәмһеҙме, оҙонмо, ҡыҫҡамы, характеры нисек, уның ниндәй сифаттары бар һәм башҡалар, һәм башҡалар. Ә поэмала Аҡмал менән бергә 12 образ, 12 йәнле кеше. Шуның өсөн дә кемдең-кем икәнен дә айырып булмай һәм улар тимер-томор араһында плунжерҙар, качалкалар, арматуралар, насостар, шарҙар, йоморо тимерҙәр, штангалар «оҙон беләктәр», «кәкере терһәктәр» һәм башҡалар араһында юғалып ҡалалар. Поэма кешеләр тураһында түгел, ә шул плунжерҙар, клапандар, йоморо шарҙар тураһында булғанлыҡты хәтерләтә. Дөрөҫ, производство темаһына яҙған ваҡытта техник терминдарҙы индермәй яҙыу мөмкин түгел. Ләкин улар уҡыусыларға аңлашылырға тейеш, ә поэмалағы плунжерҙы, нисек кенә булмаһын, күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Әҙәбиәттең бурысы кешеләрҙе күрһәтеү һәм художниктың — яҙыусының мастерлығы бына шунда асыла ла һәм төп ауырлыҡ та шундалыр. Сөнки хәлдә, аҙмы-күпме поэтик образдар индереп, һейләп сығыу бер ҙә ауырлыҡ түгел, был иң еңел юл, тип әйтке килә. Шағир бөтә нәмәне, тормошто натураһын күсереп алыу менән сикләнгән. Поэма баштан алып аҙағына тиклем һейләү методы менән яҙылған. Материал авторҙы һис кенә лә тулҡынландырмаған булһа кәрәк. Шағир бигерәк монотонно һейләй, йөрәккә ятырлыҡ бер генә лирик сигенеүҙәр юҡ.

Поэманың һуңғы, Воззваниеға ҡул ҡуйыу главаһы, башҡа главалар менән органик бәйләнмәгән, яһалма йәбештерелгән. Был инде әҫәрҙе тарҡаулатҡан.

Әҫәрҙә, шулай уҡ аңлашылмаған, ике мәғәнә аңлатҡан юлдар, строфалар, тел ҡытыршылыҡтары бик күп. Шағир һүҙҙәр, эпитеттар менән [illegible] эш итә. Был поэманың иң беренсе юлдарында уҡ күҙгә ташлана:

«Спреҫ быуат Аҡмал ҡулында
Кипкәне юҡ нефть майының».

Был һейләм, беренсенән, үҙенең төҙөлөшө менән ауыр аңлашыла; икенсенән, «Нәмә һуң ул нефть майы?» тигән һорау тыуҙыра, өсөнсөнән, автор «нефть» һүҙен, шиғыр юлындағы иҗек һанын тултырыр өсөн «нефть» итеп уҡырға мәжбүр итә.

Әҫәрҙә, шулай уҡ,

«Тимәк, хәҙер беҙҙә ремонтсы
Бригадалар тыңҡартылалар».

кеүек шиғри булмаған юлдар, «корт йыйын — посттарын», «Сәғәткә — эпекаштор», «контора—машина», һәм башҡалар кеүек зәғиф рифмалар йыш осрайҙар.

«Ел һейләй», «Ай һейләй», «Ҡара поршень һоро таштарға һейләй» кеүек таҡмаҡлаған, иҫкергән алымдарҙың күп булыуы ла ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра.

«Тынысльҡ өсөн» поэмаһы үҙенең темаһы һәм маҡсаты менән М. Сөндәклә ижады һәм башҡорт совет поэзияһы өсөн алға булырлыҡ матур башланғыс, ләкин ул, тормошто өйрәнмәйенсә, беренсе тәьҫирҙәр аҫтында тыуған әҫәр. Һис шикһеҙ, ҡабаланыу бәләһе: авторҙың үҙенә яуаплылыҡ тоймау, уңыштарҙан баш әйләнеү һөҙөмтәһе.

Шулай итеп, Маҡсуд Сөндәклә ижадында «Маҡар Малай» — бер аҙым алға булһа, «Тынысльҡ юлы» поэмаһы — ике аҙым артҡа сигеү булып тора.

Нәзәр Нәжми.

Яҙ үҙенең тулы хокуҡында. Сокорҙарҙан һәм йылғаларҙан аҡҡан һыуҙар Ағиҙелдең боҙҙарын ҡурҡытты. Өфөнән Салауат исемендәге баҡсаһы һәр йылды Ағиҙелдә боҙ китеүен ҡарарға килгән кешеләр менән тулы була.
Һүрәттә: Ағиҙелдә боҙ китеү. М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ғ. Ғәлиев

ТАША ИҘЕЛ...

Алыҫтарға ашыға ағым һыуҙар,
Бер-беренән боҙҙар юл һорай,
Ярһы Иҙел, шауы, ярҙан Иҙел
Ғәжәп бер йыр булып яңғырай.
Таша ташҡын киң ярҙарҙан ашып,
Ҡаршылыҡ юҡ уның юлында,
Ул Волгаға ҡайнар сәләм илтә
Ағиҙелдә үҫкән кешенән.
Ҡаяларҙың аҡ таштарын йыуып
Ыңғыраҡтар хәбәр һөйләгән, Иҙелдә,
Шул һыуҙарҙан көслө ашҡыныу бар

Ярға баҫҡан кеше күңелендә.
Шарлауыҡтар барып ҡушылғандай,
Зур кеүәтле ағыу ташҡынға
Кешеләр ҙә бер зур тормош һәм
Тыныс хеҙмәт өсөн ашҡына.
Тыуыр иҙгә, тыныс иҙгә шауы
Һуғыш өнөн күмер, юғалтыр,
Кешеләр төҙөр туған Ағиҙелдә
Коммунизмдың яңы гиганттын.

1951.

Йәйге спорт сезонына өлгәлә әҙерләнергә

Быйылғы ҡышҡы спорт сезоны республикабыҙҙың ҡалаларында һәм ауылдарында массовый физкультура хәрәкәтенең яңы уңыштары менән тамамланды. Үҙған сезонда физкультура һәм спорт эшенә күп кенә яңы кешеләр ылыҡтырылды. Район, ҡала һәм республика саңғы ярыштарында 70 меңдән артыҡ кеше ҡатнашты.

«Динамо», «Искра», «Медик», «Спартак» һәм башҡа спорт обществоларында саңғы, конькы секциялары үҙҙәренең эшен яҡшы ойоштороп ебәрҙеләр. «Динамо»ның конькы секцияһында шөғөлләнеүселәр иҫәбе 500-гә етте. Быйыл физкультурасылар ГТО значоктарын тапшырыу буйынса бик яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәштеләр. Быйылғы сезонда конькы буйынса ярыштарҙа республикабыҙҙың спортсмендары 13 яңы рекорд ҡуйҙылар. Мәҫәлән, Кондратьева («Искра» обществоһы), Якушева, Полянская («Динамо») һәм башҡа иптәштәр яҡшы һөҙөмтәләр күрһәттеләр. Конькиҙа фигуралы шыуыу буйынса күрһәткестәр тағы ла үҫтеләр. Митрошенко, Янбарисова иптәштәр РСФСР чемпионы исемен алдылар.

Республикабыҙҙың гимнастар командаһы Өфөлә үткәрелгән РСФСР-ҙың Волга буйы зонаһы ярышында спорт һәм художестволы гимнастика, акробатика буйынса икенсе урынды алды. Республика буйынса ҡышҡы сезонда үткәрелгән ярыштарҙа бөтәһе 120 меңдән артыҡ кеше ҡатнашты.

Үҙған ҡышҡы сезонда колхозсыларҙың ирекле спорт обществоһын булдырыу буйынса зур ғына ойоштороу эштәре башҡарылды. Бөтәһе 824 колхозда физкультура коллективтары ойошторолдо, һәм уларҙа 25 меңдән артыҡ колхозсы член булып инде. Был коллективтарҙың массовый эшкә аҙ ғына барыуы ауылда физкультура һәм спорт эшен йәйелдереп ебәреүгә зур мөмкинлек аса.

Йәйге сезонда физкультура һәм спорт ойошмаларының алдында тағы ла зур тыуа бурыстар тора. Спорт эшен артабан йәйелдереү буйынса колхоздарҙа, совхоздарҙа, МТС-тарҙа, предприятиеларҙа, учреждениеларҙа һәм уҡыу йорттарында 500 яңы коллектив ойоштороу һәм меңдәрсә ГТО значоктарына әҙерләү планлаштырыла. Спортсмендарыбыҙҙың техник оҫталыҡтарын арттырыуға һәм биҙргә тә был тиклем артта ҡалған спорт төрҙәре: туризм, велоспорт һәм көмәлә йөҙөү, милли көрәш, еңел һәм ауыр атлетикаға айырыуса иғтибар итергә кәрәк.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы урындағы республиканың йәйге спорт инвентарҙары эшлән сығарыу планын расланы. Урындағы предприятие һәм промкооперацияларҙы был планды ваҡытында үтәүҙәре республикабыҙҙың физкультурасыларыбыҙға һәм спортсмендарыбыҙға төрлө ҡарап-кәрәк менән тулыһынса тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк. Бөтә спорт обществоларынан Советтары, уҡытыу-спорт эштәре буйынса хеҙмәткәрҙәр үҙ конкрет плана төҙөп, практик эшкә башларға тейештәр.

Г. Бенгагенко,
Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге физкультура һәм спорт эштәре комитетенең сектор начальнигы.

Өс йыллыҡ агротехник уҡыуҙар курсының тәүге йылын уңышлы тамамлау өсөн

Колхозсылар араһында агротехник уҡыуҙар ойоштороу урожайҙы күтәреүҙә мөһим сараларҙың береһе булып тора. Шуға күрә ул, беҙҙең Дәүләкән күргәҙмә-тәрәк МТС-ы үҙе хеҙмәтләндергән колхоздарҙың колхозсылары араһында өс йыллыҡ агротехник уҡыу курстары ойоштороуға бик ныҡ әһәмиәт бирҙе. Үҙған йылдың ноябрь айында уҡ беҙҙең МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 9 урында өс йыллыҡ агротехник уҡыуҙар курсы ойошторолдо, улар менән етәкселек итеү өсөн МТС-тың участка агрономдары беректелде.

Ҡайһы бер колхоз председателдәре тәүҙә был уҡыуҙарҙың әһәмиәтен аңлап еткермәнеләр. «Труд» колхозының председателе иптәш Денисенко колхоз эрләтеләгән тиклем «беҙ уҡымаһаҡ та игенде үҫтерә беләбеҙ» — тип колхозсыларҙың уҡыуын ойоштороуға үҙе аяҡ салып килде. Шуға күрә был колхозда эште башлап китеү, билдәле, ауыр булды. Ләкин МТС агрономы иптәш Шадрин был ҡараштан тукталманы, ул колхоздың активистары менән беседа яһап, эште башлап ебәрҙе.

Беҙҙең районда ҡаҙаҡ колхозсылары уҡыуҙарҙың әһәмиәтен аңлап еткерҙеләр. Колхоздарҙа эрләтеү, билдәле, агротехник уҡыу курстарын оҙаҡ ваҡыт дауам итеүҙә, йәш ... «Путь Ильича» колхозының ағаһы алайыҡ. Быйылда колхоз тиклем уҡыу курсында 25 кеше уҡый, колхоз председателе иптәш Старков тәүҙә уҡ уҡыуҙарҙы ойоштороп ебәреүгә курска иғтибар итте. Уҡыу булмаһын менән уҡ колхозсылар өсөн тейешле уҡыу әсбаптары һатып алынды, курсанттар дәфтәр, китап һәм башҡа кәрәкле бөтә нәмәләр менән тәьмин ителделәр. Был колхозда курс менән МТС-тың участка агрономы иптәш Филиппов етәкселек итә. Ул занятиеларға алдан уҡ бик яҡшылап әҙерләнә, үтеләсәк һәр бер темаға яҡшылап конспект яҙа. Һәм һәр бер яңы темаларҙы үткәндә күргәҙмә материалдар ҡулланып, практик занятиелар үткәрә. Ул үтелгән темаларҙы икенсе занятиела сиктек ерәүҙә тәһәүһеҙ итте, шулай уҡ колхозсыларҙа конспект төҙөүгә өйрәтмәлә.

Пәш агрономы иптәш Әбдрахманов та үҙенә беркетелгән «Дим» колхозында агротехник уҡыуҙарҙы бик яҡшы ойоштороп алды. Ул программа материалдарын расписание буйынса өлгөлә үтеп бара. Иптәш Әбдрахманов колхозсыларҙы яңы тема материалдарына бик ныҡ әҙерләй, күргәҙмә материалдар ҡуллана һәм бик яҡшы практик эштәр үткәрә.

Курска йөрөүсе 22 колхозсының барыһы ла тиш әйтерлек программа материалдарын бик яҡшы үҙләштерә баралар. Агротехник уҡыуҙарҙың өшөлгәй яҡшы алып барылыуы колхозсыларҙы юғары урожай өсөн көрәштә әүҙемләтә.

Хәҙер инде колхоздарҙа ойошторолған агротехник уҡыу курстарының тәүге йылы тамамланып килә. Шуға күрә беҙ, агрономдар үҙҙәренең күберәк көсөн ҡалған материалдарҙы үтеүгә ҡабатлап, программа яҡшылап үҙләштереп барыуҙы, программа материалдарын ваҡытында үтеү буйынса бөтә көсөбеҙҙе һалабыҙ. Беҙ бөтә был нәмәләр тиклем колхозсыларҙың агротехник уҡыуҙарының тәүге йылын уңышлы йомғаҡлауға ныҡ ышанабыҙ.

Д. Нестеров,
Дәүләкән күргәҙмә-тәрәк МТС-ының өлкән агрономы, Социалистик Хеҙмәт Геройы.

Италия компартияһының VII съезы ябылды

РИМ, 8 апрель. (ТАСС). Бөгөн Италия коммунистар партияһының VII съезы үҙенең эшен тамамланы.

Тольятти менән Лонго доклалтары буйынса фекер алышыуҙарҙа делегат Монтаньяни (Милан) сығыш яһаны. Ул муниципалитетка алда торған һайлауҙарҙың мөһим политик әһәмиәткә эйә булыуын әйтеп үтте. Компартия ҡатнашлыҡ итәсәк һайлау блоктары, тине Монтаньяни, юғары власттарҙың һүҙ ҡуйыу һөҙөмтәләре булмаҫҡа тейеш, ә хеҙмәтсән халыҡтың реаль талаптары өсөн түбәндәге киң хәрәкәткә нигеҙләнгән булырға тейеш. Мәсьәләләрҙең берҙәмлеген, тине ул, бары тик ошо юл менән генә ныҡытырға мөмкин буласаҡ.

Көнбайыш Германия компартияһының вәкиле Шпиндт Германия компартияһының председателе Макс Рейманды һәм Италия коммунистары менән бергә дөйөм дошманға ҡаршы — Америка империалистарына һәм башҡа һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы көрәш алып барыусы немец коммунистарынан туғандарса сәләм тапшырҙы.

Шунан һуң сығыш яһаған «Италия—СССР» обществоһының генеральный секретаре Джузеппе Берти «Италия—СССР» обществоһының ойошмаларын максималь рәүештә нығытыу кәрәклеген күрһәтеп үтте.

Мичели (Калабрия) делегаты ил дәүләт кеньяғында барған кооператив хәрәкәтендә компартияның бурыстарына туҡталып үтте.

Чельсо Гини мандат комиссияһы исеменән һөйләп, былай тине: мандат комиссияһы 752 делегаттың мандатын расланы, шуларҙан 750 кеше, шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙҙарҙан 130 кеше съезда ҡатнаша. Делегаттар араһында — 302 эшсе, 51 батрак, 41 крәҫтиән, 118 хеҙмәткәр, 29 студент, ирекле профессия вәкилдәренән 142 кеше, шулай уҡ халыҡтың башҡа ҡатлам вәкилдәре бар. Съезда бөтәһе партияның 2 миллион 117 мең членынан вәкил ҡатнаша.

Италия компартияһы Үҙәк Комитеты члены Эдоардо Д'Онофрио съездың ойоштороу комиссияһы тарафынан эшләнгән резолюция проектын уҡып сыҡты. Резолюция проектында Тольятти һәм Лонго доклалтары, Секкья сығышы һәм съезда булған фекер алышыуҙар нигеҙендә партияның ойоштороу эше өсөн директивалар бар.

Тольяттиҙең тәҡдиме буйынса, съезд был резолюцияны бер тауыштан ҡабул итте. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында массовый эште киңәйтеү тураһында ҡатын-ҡыҙҙар комиссияһының ҡарарҙары хаҡында Рина Пиккллато белдереүен съезд хәтергә алды.

Джан Карло Пейетта съездың политик комиссияһының йомғаҡтары тураһында доклад яһаны. Ул резолюцияны уҡып сыҡты, был резолюция партияның 6-сы съезы үткәндән һуң Италия компартияһы Үҙәк Комитетенең эшен хуплағанлығын белдерә, һәм съезд исеменән «тыныслыҡ хөкүмәте өсөн», сит ил империализменән һәм уның Италиялағы бер төркөм хеҙмәтсеһе власына ҡаршы көрәш тураһында Тольятти тарафынан индерелгән тәҡдимде партияның һәм бөтә илдең иғтибары үҙәгенә ҡуя.

Италия компартияһының 7-се съезы, тип әйтелә резолюцияла, һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы, тыныслыҡ өсөн итальян халҡының көрәшен ҡотлай, уның көләсын тағы ла киңәйтеү өсөн һәм биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пакты төҙөү тураһында бөтә донъя халҡының фекерен һорашыу эшен уңышлы үткәреү өсөн бөтә көстө һалыу бурысын партия алдына ҡуя.

Тыныслыҡ, демократия һәм социализм өсөн көрәш алып барыусы бөтә көстәргә, Корея менән Ҡытайҙың героик халыҡтарына, донъялағы бөтә илдәрҙең туғандаш компартияларына ҡотлауҙы һәм Италия компартияһының тыныслыҡ теләге, һәм бөтә халыҡтар өсөн нурлы маяҡ булып тороусы Советтар Союзына һәм уның бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталинға ҡаҡшамаҫ ышаныс белдереүҙе съезд ҙур күтәренкелек менән ҡаршылай.

Залда көслө ҡул сабыуҙар һәм «Йәшәһен Сталин!», «Йәшәһен Тольятти!», — тигән тауыштар яңғырай.

Съезд башында Тольятти, Лонго, Секкья һәм партияның башҡа етәкселәре торған яңы Үҙәк Комитетен бер тауыштан һайлай. Үҙәк органдар составына шулай уҡ һуңғы йылдарҙа үрләтелгән йәш етәкселәр ҙә һайлана.

Тольятти үҙенең йомғаҡлау һүҙендә съезд эшенә йомғаҡ яһаны, Италия халҡына тыныслыҡ тәьмин итергә һәләтле хөкүмәт төҙөү тураһындағы саҡырыуҙың әһәмиәтен айырыуса әйтеп үтте. Тыныслыҡҡа һәм азатлыҡҡа булған ихтыярҙың тантанаһы өсөн Италия халҡының көрәшенә етәкселек итеү бурысы коммунистар алдында тора, тине Тольятти. Ул съезды ябыҡ тип иғлан итте һәм: «Йәшәһен тыныслыҡ!» — тигән лозунг ташланы.

Съезд «Интернационал» йырлау менән тамамлана.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 8 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы бөгөн ошоларҙы хәбәр итте: 1950 йылдың 26 декабренән 1951 йылдың 25 мартына тиклем Халыҡ армияһының частары Ҡытай добровольцтары менән тығыҙ бәйләнештә хәрәкәт итеп, дошмандың 90 меңдән артыҡ һалдатын һәм офицерын үлтерҙеләр һәм яраланылар, 26.868 һалдатын һәм офицерын пленға алдылар

Дошмандың 262 танкыһы, 14 бронемашинаһы, 485 автомашинаһы, төрлө калибрҙағы 1.403 оруиеһе, төрлө калибрҙағы 501 миномёты, 991 пулемёты, 17.803 винтовкаһы, 55 радиоустановкаһы, шулай уҡ бик күп башҡа төрлө ҡоралдары һәм хәрби материалдары юҡ ителде һәм ҡулға төшөрөлдө.

Шул уҡ ваҡыт эсендә дошмандың 424 самолеты атып төшөрөлдө һәм 18 карабле һыуға батырылды.

Франция порттарында забастовка

ПАРИЖ, 5 апрель. (ТАСС). «Юманите» һәм «Либерасьон» газеталарының хәбәр итеүҙәренә ҡарағанда, хәрби-диңгеҙ арсеналдарында эшләүселәрҙең кисә 24 сәғәт дауам иткән забастовкаһында илдәге һәр төрлө хәрби-диңгеҙ арсеналдарында хеҙмәт итеүселәр 85 проценттан алып 100 процентҡа тиклем ҡатнашҡандар.

Францияның күп кенә ҡалаларында хеҙмәтсәндәр баш күтәреүселәргә солидарлыҡ билдәһе итеп ҡыҫҡа ваҡытҡа үҙҙәренең эштәрен туҡтатҡандар һәм митингылар үткәргәндәр.

ТЫНЫСЛЫҠ ПАКТЫ ӨСӨН

РУМЫНИЯ

Румыния халыҡ республикаһы милли собраниеһының 7 апрелдә [...] сессияһында Румыния эшселәр па[...] һәм хөкүмәте вәкилдәренең биш [...] держава араһында Тыныслыҡ Пакт[...] төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә [...] Советы Мөрәжәғәтенә ҡул ҡуйыуҙа[...]рын белеп, Румыния хеҙмәтсәндә[...] ҡәнәғәтләнеү хистәрен кисерҙеләр.

10 апрелдә Румынияла Тыныслыҡ[...] Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡул[...]ға йыйнау башлана. Илдә был мөһим [по]литик кампанияға әҙерлек эштәре [...] йәйелдерелде. Республиканың ҡалаларында һәм ауылдарында бер нисә йыйылыш, митинг үткәрелде, уларҙа хеҙмәтсә[...] Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мө[рә]жәғәтенә ҡултамғаларын ҡуйырға үҙҙ[әре]нең әҙер булыуҙарын белдерҙеләр.

ШВЕЦИЯ

Биш бөйөк держава араһында Тын[ыс]лыҡ Пакты төҙөү тураһында Тыныслы[ҡ]тың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡ[ул]тамға йыйнау башланды.

Тыныслыҡты һаҡлауҙың милли ко[ми]теты Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Сов[еты] Мөрәжәғәтен берҙәм рәүештә яҡлар[ға] саҡырып, швед халҡына мөрәжәғәт итте.

УРУГВАЙ

Монтевидеола 25 прогрессив [...] вәкилдәре ҡатнашлығында тыныслы[ҡты] яҡлауҙың Уругвайҙағы милли комитеты[ның] ултырышы булып үтте.

Ултырышта ҡатнашыусылар Тыны[с]лыҡтың Бөтә Донъя Советы сессияһының ҡарарҙарын берҙәм хупланылар һәм би[ш] бөйөк державалар араһында Тыныслы[ҡ] Пакты төҙөү тураһындағы Мөрәжәғәтк[ә] һис кисекмәҫтән ҡултамға йыйнай ба[ш]ларға ҡарар иттеләр.

Тыныслыҡты яҡлауҙың милли комитете июль айында Уругвайҙағы тыныслыҡты яҡлаусыларҙың беренсе милли конгресын үткәрергә ҡарар итте.

8 апрель (ТАСС)

Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Секретариатына Совет ҡатын-ҡыҙҙарының антифашистик комитетенән телеграмма

Совет ҡатын-ҡыҙҙарының антифашистик комитете түбәндәге телеграмма менән Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Секретариатына мөрәжәғәт итте.

Тыныслыҡ һәм демократия өсөн көрәшеп, төрмәләргә ябылған һәм утрауҙарға һөргөнгә ебәрелгән һәм унда һәр төрлө яҙалауҙарҙан, асылыҡтан һәм ауырыуҙарҙан һәләк булыусы меңдәрсә көрәшселәр өсөн Грецияның монархо-фашистик хөкүмәте тарафынан яһалған енәйәтле яуызлыҡтар айҡанлы совет ҡатын-ҡыҙҙарының антифашистик комитеты, СССР-ҙағы миллиондарса ҡатын-ҡыҙҙар исеменән, үҙенең протесын белдерә. Төрмәләргә ябылған көрәшселәр араһында ҡатын-ҡыҙҙар, балалар һәм йәштәр бик күп.

Совет ҡатын-ҡыҙҙары үҙ илдәренең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшкән грек демократтарын яҡлап күп тапҡырҙар үҙ тауыштарын күтәргәйнеләр инде. Хәҙерге ваҡытта, ҡаршылыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан һәм шуның өсөн һөргөнгә ебәрелгән һәм төрмәләргә ултыртылған 30 мең кешене һәм үлемгә хөкөм ителгән 3 меңдән артыҡ кешене ҡотҡарыу эшендә ярҙам күрһәтеүҙе һорап Греция ҡатын-ҡыҙ әсәләрҙең Советтар Союзындағы һәм бөтә донъялағы ҡатын-ҡыҙҙарға мөрәжәғәт итеүҙәре айҡанлы, совет ҡатын-ҡыҙҙары һис кисекмәҫтән был мәсьәләгә ҡыҫылып, Греция хөкүмәтенең енәйәтле хәрәкәттәренә сик ҡуйырға саҡырып, яңынан Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына мөрәжәғәт итәләр.

Совет ҡатын-ҡыҙҙары үлем яҙаһы биреү тураһындағы приговорҙың юҡҡа сығарылыуын һәм был грек патриоттары өсөн дөйөм амнистия иғлан ителеүен талап итәләр.

Совет ҡатын-ҡыҙҙарының антифашистик комитеты.

Хроника

СССР Министрҙар Советының 1951 йылдың 30 мартындағы 992-се номерлы ҡарарына һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының 1951 йылдың 5 апрелендәге Указына ярашлы рәүештә Башҡорт АССР-ы Урман промышленносы министерствоһы бөтөрөлдө.

СССР Урман промышленносы министерствоһы «Главвостлес»ының Башҡортостан ағас әҙерләү тресы — («Башлес») һәм СССР Урман промышленносы министерствоһы «Главлесосплав»ының Башҡортостан һал ағыҙыу тресы («Башлесосплав») төҙөлдө.

БЫЛТЫРҒЫ ХАТАЛАРҘАН ҺАБАҠ АЛМАҒАНДАР

Беҙ МТС конторһына ингәндә унда МТС советының ултырышы бара ине. Совет ултырышында Хоҙайбирҙин МТС-ы хеҙмәтләндергән бөтә ун алты колхоздың да председателдәре, райком секретаре Әхмәтов, район Советы исполкомы председателе Закиров иптәштәр, МТС-тың етәксе работниктәре һәм трактор бригадаларының бригадирҙары ҡатнаштылар. МТС директоры иптәш Костылев 1950 йылда башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһаны һәм быйылғы сезонда тракторҙарға һәм тағылма инвентарҙарға ремонт барышына, машина-трактор станцияһының 1951 йылғы производство планы менән ҡаралған бурыстарына туҡталды.

Докладсы иптәш Костылев бик шыма тәфәргәйне, унда үткән йылғы өлгәшелгәндәр барыһы ла ҡалдырылмай алынған. Ә етешһеҙлектәр өҫтән генә әйтелеп үтелә ине. Ләкин советта ҡатнашыусы тәжрибәле колхоз председателдәре, механизаторҙар МТС-тың үткән йылғы эшендә булған бик сирьёҙ етешһеҙлектәрҙе бер-бер артлы асып һалдылар. Ремонт эшендәге, яғыулыҡ һәм майлау материалдары ташыуҙағы кәмселектәрҙе күрһәттеләр һәм быйылғы ауыл хужалығы йылы эшен уңышлы тамамлауҙы тәьмин итеүгә юнәлтелгән бик ҡиммәтле тәҡдимдәр индерҙеләр.

Ысынлап та, Хоҙайбирҙин МТС-ы эшендә үткән йылда һәр бер шартлы тракторға ер эшкәртеү, комбайн менән урожай йыйнауҙа ҡайһы бер алға китеүҙәр булһа ла, дөйөм алғанда, трактор һәм комбайндар паркының эшендә бик сирьёҙ етешһеҙлектәр булған. Ул етешһеҙлектәр, башлыса, ремонттың сифатһыҙ үткәрелеүе арҡаһында тракторҙар паркының нормаль эшләмәүенә ҡайтып ҡала. Быны асыҡлау өсөн ошондай миҫал килтерергә мөмкин. Үткән йыл тик тракторҙарҙың ваталыуы һәм техник етешһеҙлектәр арҡаһында ғына трактор паркы ете меңдән дә күберәк сәғәткә тик торған.

Был фактҡа МТС директоры Костылев, баш механик Мартынов иптәштәр үҙҙәренә тейешле һығымта яһарға һәм быйылғы ремонт осоронда үткән йылғы хаталарҙы ҡабатламаҫҡа тейештәр ине. Ләкин практикала был күренмәй.

Шулай итеп, МТС етәкселәре үҙған йылғы хаталарҙы быйыл да ҡабатлайҙар. Ул ғына ла түгел, трактор паркын баҫыу эштәренә әҙерләү үҙған йылғынан да насар тора. Ошо көнгә тиклем МТС-тың ремонттан сыҡмаған унлап тракторы бар. Трактор сәскестәренең дә 12-һе ремонтланмаған. Ә бит быйыл, МТС колхоздарҙа үҙған йылғыға ҡарағанда, яҙғы баҫыу эштәрен ике мең гектарға күберәк башҡарырға тейеш.

Яғыулыҡ һәм майлау материалдары ташыу менән дә эш ҡәнәғәтләнерлек түгел. Ошо көнгә тиклем, яҙғы баҫыу эштәрен башҡарыуға кәрәк булған яғыулыҡ һәм майлау материалдарының бары тик 40 проценте генә килтерелгән. Яғыулыҡ материалдарын һалыр урын булмауы яҙғы сәсеү осоронда етерлек һаҙла яғыулыҡ һәм майлау материалдары тапшыуға мөмкинлек бирмәй. МТС-тың нефтебазаһы Ағиҙелдең һул яҡ ярына урынлаштырылған. Ә тракторҙар паркының артыһынан күбеһе Ағиҙелдең уң яғындағы колхоздарҙа эшләйәсәк. Шул уҡ ваҡытта ул тракторҙарға юл өҙөлгәнгә тиклем өс көнлөк кенә яғыулыҡ материалдары сығарып ҡалыу күҙҙә тотола. Өс көндән һуң ташҡын кәмегәнгә тиклем тракторҙарҙың тик ултырыу ҡурҡынысы бар. Ә булған һауыттарҙың күбеһен Ағиҙелдең уң яҡ ярына урынлаштырғанда, был ҡыйынлыҡ булмаҫ ине. Ләкин МТС етәкселәре нефтебазаның төп өлөшөн Ағиҙел аръяғына күсереүҙе үҙҙәренә артыҡ «мәшәҡәт», тип һанайҙар. Ҡыйынлыҡтан ҡотолоу өсөн государствонан күп тоннәле яңы бактар көтәләр.

МТС-тың күп йылдарҙан бирле эшләп килгән тәжрибәле механизаторҙары бар. «Красный маяк» колхозын хеҙмәтләндергән коммунист Михаил Леонтьев бригадаһы трактористары үткән йылда һәр бер шартлы тракторға уртаса 530 гектар ер һөрҙеләр. Улар ер эшкәртеү буйынса булһын, шулай уҡ урожай алыу яғынан да МТС-та иң юғары күрһәткестәр бирҙеләр. ВКП(б) члены Григорий Учайкин бригадаһы ла һәр бер 15 ат көслө тракторға 518 гектар ер эшкәртеп, 4425 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Максим Горький исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән Федор Салтыков бригадаһы ер эшкәртеү, юғары урожай алыу һәм яғыулыҡҡа экономия яһау буйынса тағы ла юғарыраҡ күрһәткестәр бирҙе. Шағалев һәм Спадишләр сменаһы «НАТИ» тракторы менән сезонда 1270 — 1250-шәр гектар ер эшкәртеүгә өлгәштеләр. МТС-та «С—6» комбайны менән сезонға 700-ән алып 1105 гектарға тиклем урожай йыйнаған Г. Фадеев, С. Федоров, Д. Махов һәм Е. Штыков иптәштәр кеүек алдынғы комбайнерҙар бар.

Быйылғы ремонт осоронда Ф. Яитилин, П. Погорелов, З. Абдюшов, Ф. Салтыков иптәштәр етәкселек иткән бригадаларҙың трактористары айырыуса яҡшы эшләнеләр. Яҡшылап ремонтланған һәм ваҡытында профилактик саралар үткәреп барылған трактор үҙ эшенең мастеры булып әүерелгән тәжрибәле тракторист ҡулында һәр ваҡыт тотҡарлыҡһыҙ эшләүсән була.

Алдынғы механизаторҙарҙың эш өлгөһендә, МТС-тың бөтә трактористарының да, бөтә комбайнерҙарының да юғары етештереүсәнлекле эшләүенә өлгәшкәндә, производство планын бик күпкә арттырып үтәү өсөн иң тиклем күп резервтар бар икәне асыҡ күренеп тора. Тик быны өсөн кешеләр, кадрҙар менән даими эш алып барырға, кадрҙарҙы техникаға тулыһынса эйә булып өлгөргән алдынғы механизаторҙар өлгөһендә тәрбиәләргә кәрәк. О был өлкәлә Хоҙайбирҙин МТС-ында директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары Рәхимғолов һәм баш механик Мартынов иптәштәр бик әкрен ҡуҙғалалар. Хоҙайбирҙин МТС-ында ошо көнгә тиклем Иван Бунеевтең эш методын механизаторҙар менән өйрәнмәгәндәр. Бригадалар араһында яҙғы сәсеү осорона социалистик ярыш договорҙары төҙөлмәгән. Партия ойошмаһының механизаторҙар араһында массовый-политик эш алып барыуға төҙөлгән планы юҡ. Трактористар һәм ремонт эшселәре менән политик тәрбиә һәм уларҙың квалификацияларын күтәреү эше аҙнаға ике-өс тапҡыр, иртән, эш башлар алдынан 5 — 10 минутлыҡ политик йәки техник информация үткәреүгә генә ҡайтарып ҡалдырылған.

МТС партия ойошмаһы 25 кешенән тора. Был коллектив партия-политик һәм партия-ойоштороу эштәрен принципиаль юғарылыҡҡа күтәреүгә тулыһынса һәләтле. Унан тыш, юғарыла әйтеп үтелгәненсә, МТС коллективының ҙур эш тәжрибәле, техник грамоталы, юғары квалификациялы уңарлаған алдынғы механизаторҙары, партияһыҙ большевиктәре бар. Был кадрҙарҙы трактор бригадаларына дөрөҫ урынлаштырып, уларҙан тейешле эш талап иткәндә, партия ойошмаһы, һис шикһеҙ, механизаторҙар коллективының яҙғы сәсеүгә әҙерлек эшендә ҙур ғына уңышлыҡтар ҡаҙаныуына өлгәшер ине. Партия ойошмаһы был мөмкинлектәрҙән файҙаланмаған.

Хоҙайбирҙин МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙың күбеһе үткән йылды трактор бригадаларын прицепщиктар, һыу ташыусылар менән тәьмин итеүгә, яғыулыҡты, сәсеү орлоғон ваҡытында килтереүгә ғәфү итмәҫлек һалҡын ҡаранылар. Прицепщик-плугарҙар булмау, һыу һәм яғыулыҡ материалдарын, сәсеү орлоҡтарын ваҡытында килтермәү, һөрөләргә тейешле булған майҙандарҙы комбайн һаламдарынан таҙартып әҙерләмәү арҡаһында тракторҙар 6 мең сәғәткә ихын буш ултырҙылар. Был етешһеҙлектәрҙең быйыл ҡабатланыуына һис тә юл ҡуйылмаҫҡа тейеш.

Яҙғы сәсеүҙе агротехник срокта үткәреп, юғары һәм тотороҡло урожайға нигеҙ һалыу өсөн тракторҙарҙың тәүлек әйләнәһенә, тотҡарлыҡһыҙ юғары етештереүсәнлекле эшләүҙәренә өлгәшеү МТС алдында торған иң мөһим бурыс ул. Был бурысты өлгәлә үтәү өсөн МТС работниктәре үҙҙәренең бөтә көстәрен ҡалған аҙ ваҡытты яҙғы сәсеүгә өлгәлә әҙерләнеүгә файҙаланырға, үткән йылғы хаталарҙы быйыл ҡабатламаҫҡа тейештәр.

Ғәзиз Галин.
Иомағужа районы.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Бөгөн театрҙарҙа һәм киноларҙа

Башҡорт государство опера һәм бал[ет] театрында — «ГАЛЬКА».
Рус драма театрында — «ЛУТОНИН[ДАР] СЕМЬЯҺЫ».
«Салауатта» — «ЯЛАНДА».
«Уралда» — «КАДЖОНА».
Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «ЫСЫН КЕШЕ ТУРАҺЫНДА ПОВЕСТЬ», «ШТРАФ МАЙҘАНЫ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2 72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01928. Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тираж 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл
№ 71 (8788)
11
АПРЕЛЬ
шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

МАЙ АЛДЫ СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШЫ. Баҫыу эштәре көндәлеге. Н. Ғәлимов. — Совхоз механизаторҙарының ярышы (1-се бит).

Ш. Сәитов. — Иван Бунеев саҡырыуына ҡушылдылар (1-се бит).

КОММУНИЗМДЕҢ БӨЙӨК ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ә. Бикишев. — Партия мәғарифендә етәкселекте яҡшыртырға (2-се бит).

Кирәй Мәргән. — Хәҙерге мәҡәләр һәм әйтемдәр (2 — 3-сө биттәр).

С. Мәүлютов. — И. А. Хлескин — Сталин премияһы лауреаты (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. М. Ғәлиев — Орлоҡтарҙы һауала ҡыҙҙырыу (3-сө бит).

Ә. Әхтәмов. — Сәсеү орлоҡтарын ағыулау (3-сө бит).

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР. Д. Мәһәҙиев. — Китап һатыу магазины кәрәк (3-сө бит).

И. Кунсбаев. — Газеталар тулы килмәй (3-сө бит).

Ж. Жөбәров. — Колхоз ҡошсолоҡ фермалары (4-се бит).

Х. Сафин. — Калининков МТС-ында бай техниканы файҙаланыу әсен көрәш юҡ (4-се бит).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Бөйөк тыныслыҡ эше әсен көрәшселәргә — халыҡ-ара Сталин премияһы лауреаттарын бөтә прогрессив кешелек донъяһы хөрмәтләй (4-се бит).

Урожайҙы күтәреүҙә резервтарҙы тулыһынса файҙаланайыҡ!

Республикабыҙҙың колхоздары, МТС һәм совхоздары хәҙер юғары урожай өсөн көрәштең хәл иткес осорона инделәр.

Быйыл яҙ бик иртә һәм берҙәм килде. Был айырым колхоздарҙа ғына түгел, ә бөтөн райондарҙа яҙғы баҫыу эштәрен алдан ебәреүгә мөмкинлек тыуҙырҙы. Туймазы, Бүгәрсен, Бүздәк, Әлшәй һәм башҡа бик күп райондарҙа баҫыу эштәре көндән-көн киңерәк йәйелә бара. Учалы районы Сталин исемендәге ауыл хужалығы артеленда бөтә бригадалар ҙа баҫыуға сыҡтылар. Ике көн эсендә генә был колхозда 1000 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо, әүр майҙанда ужымдарҙа өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелде. «Октябрь», «Яйыҡ», «Ҡыҙыл партизан», Ленин һәм Ворошилов исемендәге колхоздарҙа ҡар һыуҙары тотоу, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу менән бергә, ужымдарҙы һәм түңгә һөрөлгән ерҙәрҙе тырматыу эштәре лә киңәйгәндән-киңәйә бара.

Әлшәй районы колхоздары ла береһе артынан икенсеһе баҫыу эштәренә төштөләр. Тельман исемендәге колхоз бағыусыларында көн һайын йөҙҙән артыҡ кеше эшләй. Бында ике көн эсендә генә 350 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо, 100 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәре өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Хәҙер колхозсылар, МТС һәм совхоз эшселәре, ауыл хужалығы специалистәре бары тик бер генә уй һәм теләк — яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа, яҡшы сифатлы итеп үткәреп, юғары урожай алыуға ныҡлы нигеҙ һалып ҡалдырыу уйы һәм теләге менән генә йәшәйҙәр. Улар быйыл үҙҙәренең алдында ниндәй ҙурлы һәм почетлы бурыстар тороуын яҡшы аңлайҙар. Быйыл республикабыҙҙың колхоздарында сәсеү майҙаны үткән йылға сағыштырғанда, 333,4 мең гектарға артасаҡ. Шулай уҡ бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан, үҙған йылға ҡарағанда, 2-3 центнер артыҡ урожай алыу бурысы тора.

Колхоздарҙың түңгә һөрөлгән һәм ҡалҡыр ерҙәре менән 57 процентҡа ғына тәьмин ителеүҙәре һәм яҙғы осорҙа меңдәрсә гектарҙарҙы һөрөп сәсергә тура килеүе быйыл баҫыу эштәренең бик ҡатмарлы, ауыр шарттарҙа үтәсәге тураһында һөйләйҙәр.

Был мөһим бурыстарҙы уңышлы үтәп сығыу өсөн колхоздарҙа, МТС һәм совхоздарҙа бөтә мөмкинлектәр бар. Ваҡ колхоздарҙы эреләтеү МТС-тарҙа булған бай техниканы тулы файҙаланыуға киң юл аса. МТС-тар быйыл, үҙған йылға ҡарағанда, меңдәрсә гектар ерҙе артыҡ эшкәртергә тейештәр. Хәҙер урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының бурысы бөтә колхозсыларҙы, механизаторҙарҙы һәм ауыл хужалығы специалистарын яҙғы баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа сроктарҙа яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн большевиктарса көрәшкә туплауҙан тора.

Урожайҙы күтәреүҙең резервтары бик күп. Баҫыуҙарҙа күберәк дым туплап ҡалыу өсөн ҡар һыуҙары тотоу, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу, тырматыу һәм башҡа шундай бик күп саралар урожайҙы күтәреүҙә бик бай резервтар булып торалар. Алдынғы колхоздарҙа был сараларҙы үткәреү хәҙер инде системаға инде. Кушнаренко районы Буденный исемендәге колхозда үҙған йыл яҙ ужым сәсеүлектәрен минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыу арҡаһында 100 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 28-әр центнер урожай алдылар. Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозында ла ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәр бер гектарҙан 23-әр центнер урожай алыуға мөмкинлек бирҙе.

Республикабыҙҙың колхоздары быйыл 150 мең гектар майҙанда ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырып, уның бөтәһе 2 миллиондан 500 мең бот өҫтәмә урожай аласаҡтар. Ужымдарҙы тырматыу ҙа шулай уҡ һәр бер гектарға 1,5—2-шәр центнер өҫтәмә урожай бирә. Был сара быйыл 400 мең гектар майҙанда үткәрелергә тейеш. Республикабыҙ был сараны үткәреүҙән генә 600—800 мең центнер өҫтәмә урожай аласаҡ. Бына шуға күрә лә алдынғы колхоздар тәүге мөмкинлектәр тыуыу менән үк һис кисекмәҫтән баҫыуҙарҙа ҡар һыуҙары тотоуға, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуға һәм тырматыуға башланылар һәм был эштәрҙе көндән-көн киңерәк йәйелдерә баралар.

Государство колхоздарға йыл һайын бик күп һанда минераль ашламалар бирә. Республикабыҙҙың колхоздары ҡышҡы осорҙа ғына 9000 тонна минераль ашламалар ташып ҡуйҙылар. Бынан башҡа колхоздарҙың үҙҙәрендә серегән тирес, көл, ҡош тиҙәге һәм башҡа төрлө урындағы ашламаларҙы әҙерләү буйынса ҡыш буйына ҡыҙыу эш барҙы. Хәҙер бурыс—һис кисекмәҫтән, бына был бай ашламаларҙы урожайҙы күтәреү өсөн тулыһынса һәм дөрөҫ файҙаланыуҙан тора.

Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы һәм тырматыуҙы иртә һәм ҡыҫҡа сроктарҙа үткәргәндә генә уларҙың тейешле һөҙөмтә биреүе мөмкин. Бары тик иртә сроктарҙа индерелгән саҡта ғына, ашламалар ерҙәге мул дым менән тулыһынса файҙаланып ҡала аласаҡтар. Шуға күрә лә ашламаларҙы ужым өҫтөндә ҡар иреп бөтәр-бөтмәҫ, ер өҫтө туң саҡта уҡ индерергә кәрәк.

Өҫтәмә аҙыҡландырыу, беренсе нәүбәттә, орлоҡсолоҡ участкаларында, ужымдар ҡар аҫтынан зәғифләнеп сыҡҡан ерҙәрҙә үткәрелергә тейеш. Ашламаларҙың бөтә участкаларҙа ла тигеҙ индерелеүенә ныҡ иғтибар бирергә кәрәк. Быйыл гранул ашламалар киң файҙаланылырға тейеш. Гранул ашламалар урожайға ҙур йоғонто яһайҙар.

Ужымдарҙы тырматыуҙы һис һуңлатырға ярамай. Һуңлап тырматҡанда ер өҫтө тиҙ киҙә һәм ҡаты ҡатлам хасил була. Ужымдарҙы тырматыу 3 — 5 көн эсендә тамамланырға тейеш. Быйыл яҙҙың бик иртә һәм берҙәм килеүе, көндәрҙең ҡояшлы һәм йылы тороуы баҫыу эштәренең юғары темплы булыуын талап итә. Бер үк ваҡытта түңгә һөрөлгән ерҙәрҙе тырматырға, ә ҡайһы бер колхоздарҙа хатта ер һөрә һәм сәсә башларға тура киләсәк. Бына был хәл колхоз, МТС етәкселәренән һәм шулай уҡ ауыл хужалығы органдарынан эшкә оператив етәкселек итеүҙе, бөтә төр баҫыу эштәрен дә бергә бәйләп алып бара белеүҙе, эште ойоштора белеүҙе талап итә.

Ләкин яҙҙың иртә килеүе күп кенә колхоз һәм МТС етәкселәре өсөн «көтөлмәгән хәл» булды. Ҡайһы бер МТС-тарҙа тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар әле булһа ремонт мастерскойҙарында ултыралар. Күп колхоздарҙа тырмалар етешмәй. Ҡайһы бер райондарҙа яҙғы баҫыу эштәрен башлауға тулы мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан, тотош массивтарҙың киҙеүен көтөп, ҡиммәтле ваҡытты ҡулдарынан ысҡындыралар.

Яҙғы баҫыу эштәрендәге тәүге көндәрҙең хаталары ашығыс төҙәтелергә, бөрөла алмаусылыҡҡа сик ҡуйылырға тейеш. Яҙғы баҫыу эштәрендә көндәр һәм сәғәттәр генә түгел, ә һәр бер минут һәм секунд ҡиммәт. Урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары, колхоз, МТС һәм совхоз етәкселәре быйылғы яҙғы сәсеүҙең бына был үҙсәнлектәрен ныҡ иҫтә тоторға, бөтә көстө яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта яҡшы сифатлы итеп үткәреүгә тупларға тейештәр. Ҡар һыуҙары тотоу, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу эштәрен әле 2 — 3 көн эсендә тулыһынса тамамларға кәрәк.

Республикабыҙҙың колхозсылары һәм механизаторҙары, яҙғы баҫыу эштәрен алғараҡ үткәреү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерәйек!

Оборудованиелар социалистик һаҡлыҡҡа алына

Өфө электротехника заводында электр оборудованиеларе заводының инициативаһы ҡайнар хуплау тапты. Завод коллективы, май алды ярышына ҡушылып, апрель айы һәм икенсе квартал планларын срогынан алда 105 процентҡа үтәү өсөн көрәшә. Оборудованиеларҙың ремонтта хеҙмәт итеү срогын оҙайтыу өсөн ярыш коллективта киң урын алды. Заводтың бөтә цехтарында ла эшселәр, инженер-техник работниктар индивидуаль ярышҡа сығалар һәм оборудованиеларҙы социалистик һаҡлыҡҡа алалар.

Начальнигы иптәш Абдуллин булған 3-сө номерлы цехтың прессовщицалар бригадаһы 20 прессформаны социалистик һаҡлыҡҡа алды. Бригада члендәре Кусаева, Ткаченко, Сариградская һәм башҡа иптәштәр үҙ станоктарын бөтә ҡеүәтенә эшләтәләр. Һөҙөмтәлә улар көндәлек норманы 195 проценттан алып 200 процентҡа тиклем үтәйҙәр. Улар өлгөһөндә прессовщиктар Гилев, Григорьев иптәштәр ҙа үҙ станоктарының ҡеүәтен күтәреү өсөн көрәшәләр. Бындай стахановсылар һаны заводта көндән-көн арта бара.

Айлыҡ планды арттырып үтәүселәр

Баймаҡ. Һәүәнәк төҙөлөш комбинатының алдынғы ағас ҡырҡыусыһы Пивоваров Василий май алды социалистик ярышына ҡушылып, март айы планын 120 процентҡа, биш айлыҡ планды дүрт айҙа үтәргә йөкләмә алғайны. Ул үҙенең өлгөн йөкләмәһен ваҡытынан үтәү өсөн көрәшеп, һөҙөмтәлә март айы планын 150 процентҡа үтәне, ә биш айлыҡ планды әле көндәрҙә үтәйәсәк.

Комбинат валовой продукция алыу буйынса квартал планын 128 процентҡа үтәне. Хәҙер комбинат коллективы биш айлыҡ планды 1 майға үтәү өсөн көрәшә.

Май алды социалистик ярышы

Өфө тау оборудованиелары заводында стахановсы-токарь иптәш Г. Михеев 1 Май хөрмәтенә смена нормаһын 200 процентҡа үтәргә йөкләмә алғайны. Хәҙер йөкләмә намыҫ менән үтәлә.

Һүрәттә: иптәш Г. Михеев эш өҫтөндә.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ

Совхоз механизаторҙарының ярышы

Мәсәғүт совхозы механизаторҙары техниканы юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланыу өсөн социалистик ярышҡа ҡушылдылар. Өсөнсө бүлексәнең (управляющие иптәш Звенигородский) тракторисәтәре машиналарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алдылар һәм тракторҙарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеген, элеккегә ҡарағанда, байтаҡ күтәрергә һүҙ бирҙеләр.

Совхоз тракторисәтәре Иван Бунеевтең патриотик башлағысын ҡайнар хуплап, машиналарҙың ремонт-ара срогын оҙайтырға булдылар. Улар сәсеүҙе эте эш көнөндә, ужым культураларын тырматыуҙы ике эш көнөндә тамамларға йөкләмә алдылар.

Урожайлылыҡты күтәреү өсөн механизаторҙар тик отлично сифатлы итеп, сәғәт графигы менән генә эшләргә ҡарар иттеләр. Хәҙер партбюро инициативаһы менән бында алдынғы механизаторҙарҙың эш тәжрибәләрен өйрәнеү башланды. Совхоз механизаторҙары ер эшкәртеүҙең алдынғы методтарын, сәғәт графигы менән эшләү һәм техниканы юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланыу сараларын өйрәнәләр.

Үҙәк мастерскойҙың стахановсы токаре иптәш Топорова бөтә йыл буйынса тыныслыҡ вахтаһына баҫып эшләргә булды. Ул тәүге көндәрҙән үк нормаһын 200 процентҡа үтәй. Иптәш Топорова бөтә оборудованиеларҙы социалистик һаҡлыҡҡа алды һәм смена заданиеларен бөтә йыл буйына ике тапҡырға арттырып үтәргә һүҙ бирҙе. Мәсәғүт совхозы механизаторҙары техниканан ул бирә алғандың бөтәһен дә алыу өсөн көрәшәләр.

Н. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Иван Бунеев саҡырыуына ҡушылдылар

Бөҙәрә. (Телефон аша). Ишле МТС-ының иптәш В. Нагаев етәкселек иткән трактор бригадаһы члендәре, Краснодар крайы Малороссийск МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең саҡырыуына ҡушылып, тракторҙарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алдылар.

Улар 15 ат көслө һәр бер тракторға 800 гектар ер һөрөргә, «С—80» тракторы менән ремонт-ара эшләү срогын 2000 гектарҙан 2200 гектарға тиклем оҙайтырға, «НАТИ» тракторы менән эшләү срогын 1000 гектарҙан 1300 гектарға тиклем оҙайтырға һәм 2500 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһарға һүҙ бирҙеләр. Эшкәртелгән һәр бер гектар ерҙең үҙенә төшөү хаҡын 1 һум 50 тингә арзанайтыу ярышта алынған йөкләмәнең төп пункттарынан береһе булып тора.

Бригада члендәре үҙҙәре хеҙмәтләндергән «Яңы бүләк» колхозында иртә культураларҙы 6 эш көнөндә сәсеп, һәр бер гектарҙан 100 бот, ә 300 гектар орлоҡ участкаһының һәр бер гектарынан 120 бот урожай үҫтерергә йөкләмә алдылар.

Ш. Сәитов.

Ер тырматалар

Баймаҡ. (Телефон аша). Быйыл баҫыу эштәре, үҙған йылға ҡарағанда, 3 көнгә элек башланды.

Сибай МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙың күпселегендә ҡар һыуҙары тотоу, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу ҙур ойошҡанлыҡ менән алып барыла. «Яңы тормош» колхозында 350 гектар, Сталин исемендәге колхозда — 150 гектар, «Урғаза» колхозында 200 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тоттолар. Район буйынса 1500 гектар майҙанда ҡар һыуы тотолдо һәм 579 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Сталин исемендәге колхозда 50 гектар, «Төйәләҫ» колхозында 30 гектар пар ере тырматылды. Ворошилов һәм Карл Маркс исемендәге колхоздарҙа ла көҙ һөрөлгән ерҙәр тырматыла.

И. Зарипов.

Бөтә тракторҙар баҫыуҙарҙа эшләйҙәр

Аҡъяр. (Телефон аша). Хәйбулла районы игенселәре һәм механизаторҙары инде бишенсе көн баҫыуҙа эшләйҙәр: пар һәм түңгә һөрөлгән ерҙәр тырматыла, яҙғы һөрөү эштәре бара. Районда 8400 гектар ер тырматылды, 128 гектар һөрөлдө, 26 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ағастары ултыртылды.

Хәйбулла һәм Һаҡмар МТС-тарының бөтә трактор бригадалары баҫыу эштәренә ҡушылдылар. Һаҡмар МТС-ының иптәш Шевченко етәкселек иткән трактор бригадаһы тракторисәтәре «Красное знамя» колхозында 42 гектар ер һөрҙөләр. «Новый путь» һәм Калинин исемендәге колхоздарҙа ла тракторҙар ер һөрәләр.

«Красная звезда» колхозында 6 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ағастары ултыртылды. Был эш шулай уҡ «Красное знамя» һәм «Красный Октябрь» колхоздарында ла уңышлы алып барыла.

Н. Павлов.

СТАХАНОВСЫ ЦЕХ

Өфөләге яҙыу машиналары заводының механика-йыйнау цехы коллективы май алды социалистик ярышына ҡушылып эшләй башлағандан бирле һуң һәр көн һайын яңынан-яңы уңыштарға өлгәшеп килә. Цехта беренсе сортлы продукция эшләп сығарыу, планға ҡарағанда, 2 процентҡа артты, хеҙмәт етештереүсәнлеге 12 процентҡа күтәрелде, продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 6,6 процентҡа кәметелде.

Посенко, Пивоваров, Тютюнюк иптәштәр етәкселек иткән бригадалар көндәлек заданиеларен 140 — 150 процентҡа үтәп, беренсе сортлы ғына продукция эшләп сығарҙылар.

Иптәш Крехов бригадаһы май алды ярышында алдынғылар сафында бара. Ул смена заданиеһын 200 процентҡа үтәй.

Цехтың стахановсылары үҙ бригадаларында өлгәшелгән уңыштар менән сикләнеп ҡалмайҙар, улар үҙҙәренең эш методтарын башҡа цехтарға ла күсерәләр һәм техниканы яҡшыраҡ файҙаланыу юлдарын эҙләйҙәр

Р. Сафин.

Өфө Ворошилов исемендәге аяҡ кейемдәре фабрикаһы коллективы май алды ярышын киң йәйелдерҙе. Фабриканың бөтә эшселәре лә үҙ йөкләмәләрен үтәү буйынса намыҫлы хеҙмәт күрһәтәләр.

Һүрәттә: стахановсы иптәш А. Назиров эш өҫтөндә. Ул нормаһын систематик рәүештә арттырып үтәй.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

КӨҘ-ЙЫЛҒА ЛЕСПРОМХОЗЫ ҮҪӘ

Көҙ-йылға леспромхозы Белорет металлургия комбинатының урман конторы системаһында алдынғы леспромхоздарҙан һанала. Уның коллективы ғинуар айынан бирле үҙенең ҡулында ВКП(б) райкомының һәм район Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын тотоп килә.

Леспромхоз эшселәре араһында хеҙмәт етештереүсәнлеге айҙан-айға үҫә бара. Унда Харисов, Әюпов һымаҡ берәр ярым, икешәр биш йыллыҡ норма үтәүсе социалистик ярыш алдынғылары бар. Ғайсаров, Мажитов һәм башҡа иптәштәр көндәлек нормаларын икешәр тапҡырға арттырып үтәйҙәр.

Хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреүҙә механизация саралары бик ныҡ ярҙам итә. Хәҙер леспромхозда үҙ электр станцияһы эшләй, ағас ҡырҡыу эшенең 70 проценты механизациялаштырылған. Техника менән оҫта эш итә белгән ундарса специалистар үҫтө.

Ғ. Ғәлимшин.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрендә

Волга-Дон каналы трассаһында

Цимлянская. Төҙөлөш эштәре фронты ундарса километрҙарға һуҙылды. Дон магистраль каналы трассаһында механизаторҙар — Терехов, Зуков, Леготин иптәштәр стахановса хеҙмәт итәләр. Май алды вахтаһы көндәрендә уларҙың һәр береһе үҙҙәренең атлап йөрөүсе экскаваторҙары менән смена һайын 1,5 мең кубометр грунт сығарып, заданиеларен ике тапҡырға яҡын арттырып үтәй. Әле тағы ла атлап йөрөүсе бер экскаватор сафҡа инде. Яҡын көндәрҙә магистраль канал трассаһына яңынан ер ҡаҙыусы бер нисә машина сығасаҡ. Улар артынан атлап йөрөүсе 14 кублы экскаватор канал ҡаҙыу эшенә сығарыла.

Дон магистраль каналы Цимлянский диңгеҙенән башланасаҡ. Бынан һыу канал буйлап ағып, аҙаҡтан алыҫтарға барып юғаласаҡ. Ул ер аҫтына төшөп, тоннель аша үтеп китәсәк һәм бер нисә километрҙан һуң ғына яңынан ер өҫтөнә сығасаҡ.

Хәҙер был участкала ҙур эштәр алып барыла. Тоннелдең 5 шахтаһында ла ҡаҙып төшөү эше тамамланды. Тоннелдең тәүге 200 метры әҙер ҙа инде.

Цимлянский гидро узелын төҙөүселәр үҫә барған темптар менән хеҙмәт итәләр. Май алды ярышының инициаторы иптәш Фоков етәкселек иткән 6-сы участка коллективы төҙөлөштө срогынан алда тамамлау өсөн көрәшеп, бетон һалыу заданиеһын 30 процентҡа арттырып үтәй. Волынский участкаһы коллективы апрелдең тәүге биш көнөндә, планда күрһәтелгәнгә ҡарағанда, 1000 кубометр артыҡ бетонды плотинаға һалды.



Горькийҙәге А. А. Жданов исемендәге «Красное Сормово» суднолар төҙөү заводы Волга-Дон каналында Мәскәүҙән Ростовҡа пассажирҙар йөрөтөү өсөн яңы дизель-электрик теплоходтар төҙөргә башланы. Был теплоходта 500 пассажир өсөн каюталар, ресторан, музыка һәм танцы салондары, балалар өсөн уйын каютаһы, библиотека, кино залы, солярий һәм йөҙөү өсөн бассейндар буласаҡ.

Һүрәттә: Яңы теплоходтың эскиз проекты.

П. Вознесенский фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Канал разведчиктәре графиктан алда баралар

Ашхабад. Төп Төркмән каналы трассаһында гидрогеология һәм инженер-геология эштәре әлеһан-әле киң ҡолас ала бара.

Төркмәнстан геология управлениеһының разведчиктәре көньяҡ һәм төньяҡ участкаларҙа 18 скважинаны бораулайҙар. Өлкән мастер Хиваның бригадаһы 106 метр тәрәнлектә бораулау эшен срогынан 5 көн алда тамамлауы тураһында рапорт бирҙе. Ясхан-Ҡоҙоҙо Декча участкаһында иптәш Глаголев етәкселек иткән геосъемка отряды ла үҙенең эшен срогынан алда тамамланы.

Декча һәм Чагил ҡоҙоҡтары араһындағы районда эшләүсе ҡалған 8 отряд та геосъемка һәм топографик эҙләнеүҙәр графигынан байтаҡ алда баралар.

9 апрель, (ТАСС).

Коммунизм төҙөлөштәре өсөн йөктәрҙе тиҙләтелгән метод менән ташыу

Киев, 9 апрель. (ТАСС). Украинаның ҙурос магистралдәре буйынса машиналар, оборудованиелар, төҙөлөш материалдары тейәлгән йөктәр үтә. Вагондарға: «Каховка ГЭС-ы», «Куйбышевгидростройға», «Көньяҡ Украина каналына» тигән яҙыуҙар яҙылған. Республика юлдарында станция, узел, бүлексә тимер юлсылары бөйөк коммунизм төҙөлөштәренә йөктәрҙе тиҙерәк илтеп тапшырыу өсөн үҙ-ара ярышалар.

Көньяҡ тимер юлы Основянский бүлексәһенең работниктәре Аму-Дарья йылғаһындағы гидроузел һәм Төп Төркмән каналы адрестарына төҙөлөш материалдарын вагондарға тиҙләтелгән юл менән тейәү эшен ойошторҙолар. Золотина станцияһынан цемент тейәлгән состав оҙатылды. Был поезд тиҙләтелгән ысул менән, срогынан алда әҙерләнде. Ул 3000 километрҙан ашыуыраҡ ерҙе эшкәртелмәйенсә үтәсәк.

«Цемент — коммунизм төҙөлөштәренә», Көньяҡ-Донецк тимер юлы Амвросиевка станцияһы бинаһына ошондай лозунг яҙылған. Амвросиевка цементы Каховкаға, Волгаға, Волга-Дон каналы шлюздарына китә. Тимер юлсылар коллективы көн һайын алыҫҡа маршруттар оҙаталар.

Карпат тауҙары итәгенән ағас һәм Каховка гидроэлектростанциялары төҙөүселәре өсөн әҙер өй деталдәре оҙатыла. Ошондай йөк тейәлгән 56 вагон Херсон станцияһына килеп туҡтаны. Станция дежурныйы иптәш Голошенко вагондарҙы шунда уҡ судноларға бушатыу өсөн портҡа оҙатты. Әҙер өйҙәр шул көндө уҡ Днепр буйлап Каховкаға ебәрелделәр.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партия мәғарифенә етәкселекте яҡшыртырға

Өфө ҡалаһы Ленин районының промышленность предприятиелары 1950 йылдың производство планын 108 процентҡа үтәп, пландан тыш бик күп продукция эшләп сығарҙылар. Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү буйынса билдәләнгән план 4 процентҡа арттырып үтәлгән, продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 3,5 процентҡа кәметелгән. 3 миллион 627 мең һумлыҡ сырьё һәм материалдарға экономия яһалған. Промышленность предприятиеларендә алдынғы эшселәрҙең, стахановсыларҙың, новаторҙарҙың һаны артҡан. Районда 1600 кеше биш йыллыҡ заданиеларен 2-3 тапҡырға арттырып үтәгән. 2.100 кеше иң яҡшы сифатлы продукция биреү өсөн ярышҡа ылыҡтырылған. 141 бригадаға «отлично сифат бригадаһы» исеме бирелгән.

Был күрһәткестәр Ленин районының хужалыҡ өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшеүен билдәләйҙәр. Улар тураһында район партия ойошмаһының X конференцияһында отчет доклады менән сығыш яһаусы райком секретаре иптәш Вәлиев тә, доклад буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашыусы делегаттар ҙа һөйләнеләр.

Район партия ойошмаһының эшмәкәрлегендә ошо уңышлыҡтар менән бер рәттән ойоштороу һәм партия-политик эштәр өлкәһендә ҙур ғына етешһеҙлектәр ҙә бар.

— Райком район Советы башҡарма комитетының эшен үҙ өҫтөнә алған, ул тик хужалыҡ эштәре менән генә мауығып, партия-политик эште икенсе сиратҡа ҡуя, — тине үҙенең сығышында яҙыу машиналары заводының директоры делегат иптәш Лаҙынин. Был һүҙҙәрҙең дөрөҫ икәнлеген иптәш Вәлиевтең докладывы үҙе үк күрһәтеп тора. Ул партия-политик һәм партия ойоштороу эштәренең торошо тураһында һүҙ араһында әйтеп үтеү менән генә сикләнде, райкомдың был өлкәләге эшендә булған етешһеҙлектәрҙе ныҡ асманы. Иптәш Вәлиевтең докладын фекер алышыуҙа ҡатнашыусы иптәштәр бер аҙ тулыландырҙылар.

— Райком партияның тәүге ойошмаларына партия-политик эште ойоштороуҙа тейешле ярҙам күрһәтмәй, — тине үҙенең сығышында судноларҙы ремонтлау заводының партия ойошмаһы секретаре делегат иптәш Степанов, — тәүге партия ойошмаларының яңы һайланған, практикаһыҙ секретарҙары өсөн семинарҙар аҙ үткәрелә. Райком инструкторҙары тәүге партия ойошмаларының эшенә тәрән анализ яһамайҙар, уларға практик ярҙам күрһәтмәйҙәр, кире факттар йыйнау менән генә шөғөлләнәләр. Таҡта ярыу заводы директоры делегат иптәш Пономарев ошо уҡ етешһеҙлектәр тураһында әйтеп үтте.

— Райком үҙенең эшендә активтең тар түңәрәгенә таяна, — тип өҫтәне иптәш Пономарев, — райкомда булған кәңәшмәләрҙә һәр ваҡыт бер үк кешеләр була, ә промышленность предприятиеларендәге партия ойошмаларынан вәкилдәр һирәк саҡырыла.

Йәш коммунистарҙы тәрбиәләү эшенә лә райкомдың иғтибары етерлек түгел. Шул арҡала район партия ойошмаһында 108 кешенең кандидатлыҡ стаж срогы уҙып киткән. Улар араһынан 2 кеше 1942 йылдан, 13 кеше 1943 йылдан бирле кандидат булып йөрөйҙәр. Иптәш Вәлиев һанап китеү менән генә ҡәнәғәтләнгән был факттар райкомдың эшендә сериоз етешһеҙлектәр булғанын күрһәтәләр. Партия сафынан сығарылған кешеләрҙең күп кенә булыуы ла район партия ойошмаһында политик-тәрбиә эшенең тейешле кимәлдә алып барылмағанын раҫлай. Коммунистарҙы тәрбиәләүҙең төп формаһы булған партия мәғарифе селтәрендәге сериоз етешһеҙлектәр ошо көнгә тиклем бөтөрөлмәгән. Селикат заводы, «Горжилкоммунстрой» тресы, Автоуправление, таҡта ярыу заводы партия ойошмаларында политик мәктәптәрҙең һәм түңәрәктәрҙең занятиелары күп ваҡытта өҙөлә. Был партия ойошмаларында программанан 9 занятиеға тиклем артта ҡалған политик мәктәп һәм түңәрәктәр бар. Таҡта ярыу заводы партия ойошмаһында коммунистарҙың 35 проценте политик уҡыуға ылыҡтырылмаған. Райком был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн эшлекле саралар күрмәй. — Политик түңәрәк етәкселәре өсөн семинарҙар бик һирәк үткәрелә, — тип делегат иптәш Нурғәлиев.

— Райкомдың етәксе работниктары политик докладтар һәм лекциялар менән предприятиеларға оноткандa бер генә баралар, — тип өҫтәй главлетснабтың Өфө контораһы партия ойошмаһының секретаре иптәш Фәтхуллин.

Ҡайһы бер коммунистар занятиеларға әҙерлекһеҙ киләләр, конспект төҙөмәйҙәр. Райком һәм партияның тәүге ойошмалары секретарҙары был факттарға күҙ йомоп ҡарайҙар.

Конференция райкомдан күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙе талап иткән ҡарар ҡабул итте.

Райкомдың беренсе пленумында Вәлиев, Тверетинов, Ҡорбанғәлиева иптәштәр райком секретарҙары итеп һайландылар.

Ә. Бикишев.

Эреләтелгән колхоздарға иғтибарҙы көсәйтергә

Шаран район партия ойошмаһының конференцияһында ҡатнашыусы коммунистар партия райкомының һәм уның секретарҙарының эшен ҡаты тәнҡитләнеләр. Агитация һәм пропаганда эшенең йомшаҡ ҡуйылыуы, коммунистарҙың марксизм-ленинизм теорияһы менән ныҡлап ҡоралланмауҙары арҡаһында, партия ойошмаһы отчет осоронда үҫмәгән, ә киреһенсә, кәмегән.

Фекер алышыуҙа ҡатнашыусылар партия уҡыуҙарының сифатына пропаганда һәм агитация бүлегенең аҙ иғтибар итеүен, ауыл интеллигенцияһы менән насар эшләүен һәм фәнни-политик темаларға лекциялар алып барыу бөтөнләй онотолған эш участкаһы булып тороуын күрһәттеләр.

Пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире Вәлиева һәм райкомдың өсөнсө секретаре Ибраһимов иптәштәрҙең инициативаһыҙ булыуҙары арҡаһында районда идеология эштәре хужалыҡ эштәренән артта ҡалды.

Коммунистарҙан Ғилметдинов, Семенец, Ноғоманов һәм Сахаров иптәштәр райондың беренсе секретаре иптәш Асҡаровтың тәнҡитте яратмауы, үҙен тәнҡитләгән кешеләрҙән үс алыуы, райком бюроһы ағзаларының фекерҙәре менән иҫәпләшмәүе, үҙ белдеге менән генә эшләүе тураһында әйттеләр.

Фекер алышыуҙа утыҙ кеше һөйләһә лә иң мөһим һәм принципиаль мәсьәләләргә ҡағылған кеше бик аҙ булды. Билдәле булыуынса, эреләтелгән колхоздар баҫыу эштәрен ҙур майҙандарҙа башлаясаҡтар. Колхоздар эреләтелеү менән бергә уларҙың партия ойошмалары ла ҙурайҙы. Баҫыусылыҡ, малсылыҡ бригадаларында партия һәм партия-комсомол группалары ойошторолдо. Конференцияла бына ошо колхоздар, уларҙың бөгөнгө эштәре һәм киләсәге тураһында аҙ һөйләнде. Бер генә колхоз председателе лә, бер генә партия ойошмаһы секретаре лә үҙҙәренең производство пландары хаҡында һөйләмәне, эштәге етешһеҙлектәрҙе асманы.

Шаран районының колхоздары юғары доход биреүсе хужалыҡ тармаҡтарын тыуҙырыу һәм уларҙы киңәйтеү өсөн уңайлы шарттарҙа йәшәйҙәр. Бына ошо хаҡта ла ныҡлап һөйләшергә кәрәк ине. Был мөһим мәсьәлә лә ситтә ҡалды.

Быйыл эреләтелгән колхоздарҙың баҫыуҙарында эшләйәсәк тракторҙарҙың 70—80 проценты МТС-тар башҡараяҡ. Ләкин МТС эштәре тураһында ла конференцияла аҙ һөйләнде. МТС-тар эшенә иғтибар ҙа етмәне.

Яҙғы сәсеүгә әҙерлек МТС-тарҙың ҙур ғына етешһеҙлектәре бар. Әлегә тиклем МТС-та тракторҙарҙы ремонтлау эше тамамланмаған. Механизаторҙарҙы әҙерләү эше лә ҡәнәғәтләнерлек түгел. МТС-та ла политик эш бик түбән кимәлдә тора. Массово-политик эш бик түбән кимәлдә тора. Мәҫәлән, Шаран МТС-ының партия ойошмаһында март башына тиклем бер политик түңәрәк эшләмәгән.

Шаран әре орлоксолок һәм малсылыҡ районы һәм, үкенескә ҡаршы, иғтибарҙың үҙәгендә торорға тейеш булған иң ҙур ике мәсьәлә—эреләтелгән колхоздарҙың һәм МТС-тарҙың эше артҡы планға күсерелде.

И. Абдуллин.

Ағиҙел йылғаһында тиҙҙән навигация башланасаҡ. Башҡортостандың башҡалаһы — Өфөнән, Черниковскиҙән һәм республикабыҙҙың башҡа промышленность үҙәктәренән пароходтар коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә икмәк, ағас һәм төҙөлөш материалдары ташыясаҡтар.

Өфөләге затонда хәҙер навигацияға әҙерлектең иң ҡыҙыу осоро. Пароходтар пар күтәрәләр, судноларҙа механизмдарҙың эштәре тикшерелә, тиҙҙән 1951 йыл навигацияһының ҡыҙыл вымпелы күтәреләсәк.

Навигация алдынан «Советский полярник» пароходының палубаһында өс дуҫ — Ағиҙел йылғаһы пароходствоһының новаторҙары осрашты. Уларҙың береһе — Григорий Евдокимович Круподеров. Ул сирек быуат инде капитан булып эшләй.

Иптәш Круподеров етәкселек иткән «Барнаул» пароходы быйыл капиталь ремонтһыҙ дүртенсе навигацияла эшләйәсәк. Бөтә ремонт эшен экипаж рейс ваҡытында башҡара. Тик шуның һөҙөмтәһендә генә пароход коллективы 100 мең һумдан артығыраҡ файҙа бирҙе. Һуңғы өс йылда «Барнаул» пароходы экипажы бөтәһе 150 тоннанан артығыраҡ яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Бында капитандың ғына түгел, механик Иван Михайлович Бахаревтың да хеҙмәте ҙур. Ул да бөгөн алдағы рейстәр тураһында һөйләшергә палубаға сыҡты.

Капитан иптәш Орловтың исеме Ағиҙел бассейнының бөтә кешеләренә билдәле. Ул бассейндағы иң яҡшы пассажир пароходын — «Советский полярник»те Мәскәүгә йөрөтә. Үткән йылғы навигацияла «Советский полярник» экипажы Тыуған илебеҙгә фиҙакәр хеҙмәт итте. Ул пассажирҙарҙы мәҙәни хеҙмәтләндергән өсөн 82 тапҡыр рәхмәт алды.

Һүрәттә: (һулдан уңға) «Барнаул» пароходы капитаны Круподеров, шул уҡ пароходтың механигы Бахарев һәм «Советский полярник» пароходы капитаны Орлов иптәштәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Партия-политик эштең юғары кимәле өсөн

Өфө ҡалаһы Молотов районы партия ойошмаһының конференцияһында отчет доклады менән райком секретаре иптәш Волгарев сығыш яһаны.

Делегаттар райкомдың партия-политик һәм ойоштороу эштәрендә булған ҙур етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләнеләр.

— Докладсы, — тине делегат иптәш Брагин, — Өфө тимер юл узелы паровоз-вагон ремонтлау заводы һәм Ағиҙел пароходствоһы партия ойошмаларында алып барылған партия-политик эштең торошона тәрән анализ бирмәне, ә был предприятиелар, уларҙа эшләүсе коммунистар күпселеге буйынса ла, артта ҡалалар.

Иптәш Брагин райкомдың транспорт партия ойошмаларына етәкселек итеүендә булған етешһеҙлектәргә туҡталды. Иптәш Волгарев, райкомдың башҡа секретарҙары һәм инструкторҙары отчет осоронда Ағиҙел пароходствоһында бер тапҡыр ҙа булмағандар. Өфө станцияһы депоһында ла бик һирәк булғандар. Шул арҡала транспорт предприятиеларының партия ойошмаларында партия-политик эш бик йомшаҡ ҡуйылған, кадрҙар һайлап алыуҙа, уларҙы тәрбиәләүҙә һәм урынлаштырыуҙа етди хаталар ебәрелгән, производстволағы етешһеҙлектәр менән партия ойошмаларының секретарҙары аҙ ҡыҙыҡһыналар. Ағиҙел пароходствоһы һәм Өфө паровоздар ремонтлау заводы бер нисә йыл буйы государство планын үтәй алмайҙар. Өфө тимер юл управлениеһендә һәм Өфө станцияһында бюрократизм, волокита, планды продукцияның сифатын түбәнәйтеү иҫәбенә үтәргә тырышыу факттары күбәйҙе.

Доклад буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашыусы делегаттарҙан Удалов (Өфө тимер юл узелы), Сорокин (Ағиҙел пароходствоһы), Афанасьев (вагон депоһы) һәм башҡа иптәштәр ҙә райкомдың транспорт етәкселек итеүендә етешһеҙлектәрҙе күрһәттеләр. Райком работниктары транспорт партия ойошмалары секретарҙары менән доклад өсөн материал йыйыу өсөн генә осрашалар. Транспорт етешһеҙлектәрҙе ... партия ойошмаларының ... тейешле иғтибар бирмәй.

Өфө станцияһында һуңғы айҙарҙа йөк тейәү нормаһы буйынса билдәләнгән план ваҡытында үтәлмәй, хеҙмәт дисциплинаһы ла насар, шул арҡала аварияларҙа ла булғылай. Ләкин был мәсьәләләр Молотов райкомының бюроһында тикшерелмәне.

Райком бюроһында Ағиҙел пароходствоһының управлениеһының аппараттың яҡшыртыу мәсьәләһе ҡуйылып, ҡарар ҡабул ителгәйне. Ләкин был ҡарарҙың үтәлеше тикшерелмәне. Унан һуң бик күп ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, ҡарар әле лә тормошҡа ашырылмаған.

Коммунистарҙың һәм партияһыҙ активтең политик уҡыуы райкомдың һәм тәүге партия ойошмаларының иғтибар үҙәгендә булырға тейеш ине. Ләкин райком политик мәктәптәрҙең һәм түңәрәктәрҙең, унда эшләүсе пропагандистарҙың эшен тейешенсә контролдә тотмай. Иптәш Волгарев ... пропагандистарҙы ... семинарҙар ...

Делегаттар Спасс, Степных һәм Григорьев иптәштәр аҙ һаны партия ойошмаларының иғтибарһыҙлыҡ һәм ... тураһында әйттеләр. Иптәш Цибульский кадрҙарҙы һайлап алыуға райком иғтибарһыҙ ҡарауын тәнҡитләне.

— Райком, — тине уҙ, — иптәш Сакаев, — 5-се ФЗО мәктәбе директорының эшен алып, уның урынына элекке пекарня мөдире Дистанова ҡуйҙы. Яңы директор эште бик аҙ белмәй.

Конференция райкомдың транспорт предприятиелары эшенә иғтибарҙы көсәйтеүен, районда бөтә партия-политик эште йәнләндереүҙе, булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙе талап иткән ҡарар ҡабул итте.

А. Сафонов.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Белоҡатай леспромхозында хеҙмәт етештереүсәнлеге түбән"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 29-сы номерендә Белоҡатай леспромхозында эшселәр араһында социалистик ярыш ойошторолмауы һәм политик-массовый эш алып барылмауы һөҙөмтәһендә хеҙмәт етештереүсәнлегенең түбән булыуы тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Белоҡатай район комитеты редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Был хәбәр леспромхоздың партия йыйылышында тикшерелеп ағас әҙерләү һәм ташыу эшендә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә ҡарата күп кенә саралар билдәләнде. Был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн хәҙер эшселәр араһында социалистик ярышты йәйелдереү буйынса ҙур практик эш алып барыла. Леспромхоздың партия ойошмаһы хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙең әһәмиәте тураһында эшселәр өсөн лекциялар уҡыуҙы ойоштора».

„Кушнаренко районында сәсеүгә әҙерлек һуҙыла"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 43-сө номерендә Кушнаренко районында тракторҙарҙы һәм ауыл хужалығы машиналарын ремонтлау планының өҙөлөүе тураһында хәбәр баҫылғайны.

ВКП(б)-ның Кушнаренко район комитетының редакцияға хәбәр итеүенсә, «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған хәбәр ВКП(б) район комитеты бюро ултырышына ҡуйылып тикшерелгән. Бюро сәсеүгә әҙерлектә булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм тракторҙарҙы ремонтлауҙы тиҙ тамамлауға ҡарата практик саралар күргән. Һөҙөмтәлә һуңғы көндә Кушнаренко машина-трактор станцияһында тракторҙарҙы ремонтлау планы тулыһынса үтәлгән.

„Колхоз клубы иген келәтенә әйләндерелде"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 10-сы номерендә Ғафури районы «Яңы Урал» колхозы клубының иген келәтенә әүерелдерелеүе тураһында хат баҫылып сыҡҡайны. Ғафури район Советы исполкомының редакцияға хәбәр итеүенсә, клуб бинаһы колхоз игененән бушатылған. Тиҙ көндә клубҡа ремонт үткәрелеп, 1 Майҙа эшләй башлаясаҡ.

Хәҙерге мәҡәлдәр һәм әйтемдәр

КИРӘЙ МӘРГӘН

Общественный тормошта мәҡәлдең тотҡан урынын бөйөк рус яҙыусыһы А. М. Горький бик дөрөҫ һәм тапҡыр билдәләне: **«Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, — тине ул, — хеҙмәтсән халыҡтың бөтә тормош һәм социаль-тарихи тәжрибәһен өлгөлө формалаштырып бирәләр».**

Ысынлап та, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр теге йәки был халыҡтың быуаттар буйына килгән тормош тәжрибәһен, йәшәү өсөн көрәш тәжрибәһен бик ҡыҫҡа һәм үткер һүҙҙәр менән әйтеп бирәләр. Шуның өсөн дә улар быуаттар буйы дауам итеп килгән хеҙмәттең, көрәштең, тормош тәжрибәһенең билдәле күләмдәге һығымтыһы, быуаттар буйы алып барылған күҙәтеүҙең һөҙөмтәһе, бер һүҙ менән әйткәндә, шул уҡ тормош үҙе тыуҙырған общественный мөнәсәбәттәрҙең законы булып яңғырайҙар.

Мәҡәлдәр күбеһенсә һүҙ ыңғайында әйтеләләр һәм күберәк ниндәй ҙә булһа контекст эсендә йәшәйҙәр. Шуның өсөн уларҙы табыуы, һайлап алыуы бик ҡыйын. Сөнки һәр бер мәҡәлде, ашлыҡ өйөмөнән таҙа орлоҡ сүпләгәндәге кеүек, сүпләп алырға кәрәк була. Был, әлбиттә, бик ауыр һәм ҡатмарлы эш. Йәғни бер бөртөк саф алтын табыу өсөн әллә нисә тонна руда эшкәртергә кәрәк булғандағы кеүек, ойошҡан һәм формалашҡан мәҡәл табып һайлап алыу өсөн халыҡ менән аралашып йәшәргә, халыҡтың телен, тормошон, көн-күрешен, тарихын һәм культураһын өйрәнергә кәрәк була.

Мәҡәл теләһә ниндәй һүҙ араһында әйтелмәй, бәлки иң кәрәкле ваҡытта ғына ҡулланыла. Йәғни теге йәки был мәҡәлде ҡулланыу өсөн, шул мәҡәлдә әйтелгән үткерлекте сағылдырырлыҡ хәл тыуған булырға тейеш.

Әйтемдәр ҙә ошо уҡ юл менән барлыҡҡа киләләр. Ләкин улар күберәк һамаҡ жанры менән бергә йөрөйҙәр, бергә тыуалар. Әйтемде һамаҡҡа яҡын тороуы арҡаһында ҡайһы бер иптәштәр уларҙын икеһен бергә бутап йөрөтөүсәндәр. Үҙ нәүбәтендә һамаҡ менән ҡобайыр араһында ла бәйләнеш булғанлыҡтан һамаҡты түгел, хатта ҡобайырҙы ла әйтем менән буташтырып йөрөтөү күренеше осрай. Ләкин былар бөтәһе лә башҡорт фольклорындағы жанрҙарҙың үҙенсәлектәрен белеп еткермәүҙән, ул жанрҙарҙың функцияһын һәм йәшәү формаһын айыра белмәүҙән килеп сыға торған күренештәр. Был жанрҙар араһындағы ҡайһы бер оҡшашлыҡ, ғөмүмән, халыҡ ижадындағы берҙәм процестең сағылышы ул.

Әйтемдәр ҙә, мәҡәлдәр кеүек үк, билдәле бер тормош шарттарында тыуған бай тәжрибә һығымтаһы, тормош үҙе тыуҙырған ҡулланма хеҙмәтен үтәйҙәр. Айырма тик шунда ғына: мәҡәлдәр төҙөлөшө яғынан, әйтемдәргә ҡарағанда, ойошҡаныраҡ булалар. Мәҡәлдәр, ғәҙәттә, бер һөйләмдән артмай, ә әйтемдәрҙең күләме ҙур булырға мөмкин (был яҡтан әйтемдәр һамаҡҡа яҡынлашалар). Был ғына ла түгел, мәҡәлдәр һәр ваҡыт ниндәй ҙә булһа тамамланған, тығыҙ ойошоп ниндәйҙер ҡанун булып яңғырай торған фекер бирәләр. Әйтемдәр улай уҡ булмаҫҡа мөмкин. Уларҙа фекер ебе тамамланып етмәгән осраҡты ла күрергә мөмкин. Мәҫәлән, «Ауыртмаҫ башҡа тимер таяҡ» тигән әйтемгә «төштө» йәки «төшкән» тигән һүҙҙе (хәбәр) өҫтәгәндә фекер ағышы тулыланa төшер ине. Был әйтемгә формаль яҡтан килгәндә, ана шундай ойошоп етмәгәнлек күренә, фекер ағышы ярты юлда ҡалған кеүек. Ләкин халыҡ уны бына ошо килеш тотоп алған да, тулы фекер бирә алырлыҡ мәғәнәлә ҡулланып йөрөтә.

Йәки бына икенсерәк төрлө әйтемдәрҙең бер-икеһен алып ҡарайыҡ:

Күпте күргән ни белгән?
Күп уҡыған — шул белгән... .

Йәки:

Айғыр малға ни етә —
Йөрөтә белгән кешегә?
Тыуған илгә ни етә
Ҡәҙерен белгән кешегә?

Был әйтемдәрҙә бирергә теләгән фекер тулыһынса әйтелгән тип була һәм форма яғынан да был юлы билдәле ойошҡанлыҡ күренә. Был ике әйтем формаһы яғынан һамаҡҡа (йәки таҡмаҡҡа) яҡын тора. Улар ниндәйҙер ойошоп етмәгән һамаҡты хәтерләтәләр. Хатта уларҙың теге йәки был һамаҡтың эсендәге состав өлөшө булып йөрөүҙәрен дә күрергә мөмкин. Тимәк, әйтемдәр күп ваҡыт бер генә төрлө форма менән кәүҙәләндерелмәйҙәр. Әйтемдәрҙең төрлө формала — мәҡәлгә яҡындары ла, һамаҡҡа яҡындары ла булыуы мөмкин. Тимәк, әйтемдәр форма яғынан һамаҡ менән мәҡәл араһындараҡ йөрөйҙәр.

Ләкин, нисек булмаһын, мәҡәлдәр ҙә, әйтемдәр ҙә тормошта бер үк бурысты үтәйҙәр. Юғарыла әйтелгәнсә, улар икеһе лә тормош тәжрибәһенән алынған ҡулланма булып торалар.

Тормошта ҡулланма булып яңғырарлыҡ һүҙ материалына, ҡыҫҡа һәм үткер булып ойошоу өсөн, йәғни мәҡәл йәки әйтем булып формалашыу өсөн билдәле бик оҙаҡ йылдар ваҡыт талап ителә. Был, әлбиттә, дөрөҫ. Ләкин яңы шарттарҙа, тормош бик интенсив алға барған саҡта, ошо ҡайнар тормоштоң үҙен сағылдыра торған мәҡәлдәр һәм әйтемдәрҙең барлыҡҡа килеүе өсөн бер ҙә быуаттар буйына һуҙылған ваҡыт кәрәкмәй. Ғөмүмән, мәҡәлдәр тураһында һүҙ йөрөткәндә, ҡайһы бер иптәштәр бары тик шул күптән йәшәп, шымарып килгән мираҫты ғына, йәғни революцияға тиклем тыуған мәҡәлдәрҙе генә, күҙ алдына килтерәләр. Үҙҙәре күбеһенсә тормош эсендә ҡайнашып йөрөүҙәренә ҡарамаҫтан, яңы шарттарҙа, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яңы тормош тыуҙырған мәҡәлдәрҙең булыуын күҙ алдына ла килтермәйҙәр һәм күп ваҡыт уға иғтибар ҙа итмәй үтәләр. Бындай иптәштәр совет фольклорының үҫешен бары тик йыр һәм таҡмаҡ кеүек жанрҙа ғына күрәләр. Был, әлбиттә, дөрөҫ түгел. Октябрҙән һуң халыҡ ижадының һәр бер тармағы алға киткән кеүек, яңы шарттарҙа мәҡәлдәр ҙә бик ныҡ үҫте һәм күп һанда яңы тормош тыуҙырған яңы эстәлекле мәҡәлдәр барлыҡҡа килде.

Хәҙер инде беҙ һүҙҙе бындай мәҡәлдәрҙең йәшәүе йәки йәшәмәүе тураһында түгел, уларҙың төрҙәре тураһында һәм яңы социалистик тормоштоң ниндәй яҡтарын сағылдырыуҙары тураһында фекер йөрөтә алабыҙ. Совет мәҡәлдәре — әле өйрәнелмәгән өлкә. Ул — халыҡ ижадының бай һәм ҡыҙыҡлы тармағы булып үҫеп сыҡҡан яңы ижад күренеше.

Совет мәҡәлдәре яңы тормоштоң, социалистик хеҙмәттең бай тәжрибәһен сағылдырған, матур ҡомартҡы булып торалар. Хеҙмәт кешеләре араһындағы яңы мөнәсәбәттәрҙең законы булып халыҡ күңеленә сағылған был мәҡәлдәр, социалистик общественный законы булып яңғырайҙар, яңы әхлаҡ нормаһы, яңы мөнәсәбәт нормаһы булып күҙ алдына килалар. Мәҫәлән, **«колхозың алда булһа — ауыҙың балда булыр»** тигән мәҡәлдә беҙ ҡыҫҡа һәм үткер һүҙҙәр аша мул тормошта йәшәүгә ирешеү өсөн нимә кәрәклеген аңлайбыҙ. Мул тормошта йәшәү өсөн беренсе нәүбәттә үҙеңдең колхозыңды яҡшыртырға, байытырға, алға сығарырға кәрәк. Быны халыҡ үҙ күҙе менән күреп йәғни тормош тәжрибәһе аша белә. Был күп күҙәтеү һәм һынау һөҙөмтәһендә тыуған һығымта, икенсе төрлө әйткәндә, ҡағыҙға яҙылмай, телдән телгә күсеп йөрөй торған закон. **«Эшең булһа йәҙ, туңлығыңлы килер көҙ»** — тигән мәҡәл дә шул уҡ юғарыла әйтелгән мәғәнәне аңлата. Тик был һуңғы мәҡәлдә фекер ныҡыраҡ конкретлаштырелгән, йәғни колхоздағы туҡлыҡтың сығанағы әйтелгән. Тимәк, колхозды байыҡтырыу өсөн, тормошто туҡлыҡлы яһау өсөн, яҡшы хеҙмәт итергә, мәҡәлдең үҙ теле менән әйткәндә, бөтә эште йөҙ проценты менән үтәргә кәрәк. Был шулай уҡ — закон. Ә инде бына: **«ашлығы булған келәтнә ҡар һуна алмаҫ, байлығы булған колхозға нужа килә алмаҫ»** тигән мәҡәл юғарыла килтерелгән һәр ике мәҡәлдә әйтелгән фекерҙе эсенә ала һәм дөйөм һығымта сығара. Ошондай логик бәйләнеш тыуа: яҡшы эшләһәң — колхоз туҡлыҡлы була, колхоз бай булһа — тормош мул була һәм берҙәм коллектив аша, социалистик хеҙмәт аша ирешелгән байлыҡ булған ерҙә, бер ниндәй ҙә бөлгөнлөк, бәлә-ҡаҙа аслыҡ һәм нужа килеү ҡурҡынысы юҡ. Бына шулай итеп, яңы тормоштоң законы булып, тағы бер үткер һәм йыйнаҡ әйтелгән фекер — мәҡәл барлыҡҡа килә.

Мәҡәлдәр ана шулай күп ваҡыт бер-береһенә ярҙамлашып, береһендә ҡуҙғатылған фекерҙе икенсеһе тултырышып, өҫтәшеп, барлыҡҡа киләләр һәм, юғарыла күрелгәненсә, бер нисә мәғәнәлә әйтелгән фекерҙе йомғаҡлау, ниндәй ҙә булһа дөйөм һығымта яһау юлы менән тыуған мәҡәлдәрҙе лә осратырға мөмкин.

Яңы мәҡәлдәр инде Совет власының тәүге йылдарынан уҡ барлыҡҡа килә башланылар. Ләкин яңы мәҡәлдәр тыуа барыу менән иҫкеләре бөтөнләй ташланды тигән һүҙ түгел. Граждандар һуғышы осоронда һәм интервенттарға ҡаршы алып барылған изге һуғыштарҙа актив ҡатнашыусы башҡорт егеттәре — ҡыҙыл армеецтар араһында, боронғо патриотик мәҡәлдәрҙең йәшәп килеүе тураһында мәғлүмәттәр бар. Билдәле, улар бер аҙ тирәләп төҙәтелеп, яңы шарттарға ҡулайлаштырылып һәм яңы мәғәнәлә ҡулланылғандар. Мәҫәлән, **«Ир егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә», «Ҡош һауала, ат ҡырҙа, егет яуҙа һынала», «Ат ҡарағы булмаҫ, батыр ярағыҙ булмаҫ», «Ил бар ерҙә ил хур булмаҫ», «Иленде ил баҫһа, йортоңдо ҡар баҫыр», «Иле булған ир хур булмаҫ, ир егете күп булған ил хур булмаҫ»**—кеүек һәм башҡа шундай мәҡәлдәр ҡыҙыл армеецтарға үҙҙәренең патриотик бурыстарын аңлауға һәм уларҙы йәш совет ватанын һаҡлау эшенә туплауҙа ныҡ ярҙам иттеләр. Ошондай уҡ мәҡәлдәрҙе Бөйөк Ватан һуғышы шарттарында ла күп ишетергә тура килде. Улар совет һалдаттары алдында антай һәм олоатайҙар һүҙе булып, халыҡ наказы булып яңғыранылар.

Боронғо мәҡәлдәрҙең бөгөнгө тормош шарттарында ла хеҙмәт итеп килеүе, патриотик темалағы мәҡәлдәр менән генә сикләнеп ҡалмай. Тормоштоң һәр төрлө яғын сағылдырған элекке мәҡәлдәр һәм әйтемдәр яңы шарттарҙа ла үҙ көстәрен юғалтмай йәшәйҙәр һәм күбеһенсә яңы шарттар эсендә үҙгәрәләр, йәки бөтөнләй яңы мәғәнә алып китәләр. Әйтәйек, «Мәнән киткәнсе, әйәһенә етмәнсе» тигән мәҡәл элекке частный кустарь-ремесленниктең халыҡтан алған заказын үтәүгә булған ҡарашын сағылдыра. Билгеле, частный кустарь күнел бирип эшләмәгән; һәр бер заказды,—әйәһенә еткәнсе ярһа уңан һуң мин яуап бирмәйем, — тип өҫтән-өҫтән генә башҡарған. Был мәҡәл

Н. А. ХЛЕСКИН—СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТЫ

…дерында …йғолы, ҡаҡса …нидә сәстәре- …ы кера башла- …ер кеше йөрөй. …үге аҫтағы бө- …ҡыш бик ирта- …менән ҡарай. …һен дә ул бы- …береһен дә …туя алмай. …уны белмәгән …күрһә, «әле …заводта тәүге …ҙып ғыналыр, …күрә уға бө- …лә яңы, бөтәһе …ҡыҙыҡлы күре- …тап уйлар ине …ул тәрән яңы- …ыр ине.

…ту битләүендә, …йылғаһы …ағы кирбестән …ған ҙур завод …рҙы, дробил- …тирмәндәр, …алар, меха- …цияланған су- …алар, транспортерҙар, депо, бәләкәй …вагондар йөрөй торған тар тимер юл — …ар бөтәһе лә уның туранан-тура ҡат- …нашлығында барлыҡҡа килде. Һәм …ларҙың бөтәһен дә эшләү өсөн был …тарафынан күпме көс һәм ижади …һалынған!

Ул ванна мейесе цехына инде лә туҡ- …тап. Бына ул шихта тейәүсе машинаға …ҡарап тора. Машинаның айы- …ы үҙәлдәре, механизмдәре нисек эшләй, …мейескә кәрәкле ҡалынлыҡта шихта …ы аламы, быяла ҡайнатыу технология …процесе боҙолмаймы? Уны бына ошолар …ҡыҙыҡһындыра.

Был машинаны производствоға индереү …рҙең хеҙмәтен еңеләйтте, ванна мейесенә шихта һалып тороусы 16 кешене …эштән бушатты. Ошо яңылыҡты индереү …ың инициативаһы менән эшләнгәйне.

Ватлаулы машинаны производствола ҡуллана башлау өсөн тикшереүҙәр һәм …эҙләнеүҙәр яһап күпме йоҡоһоҙ төндәре …үтте уның. Бары тик ныҡышмалы, арыу- …талыуҙы белмәй эшләү генә уңышлыҡҡа …килтерҙе.

Контрольный щит будкаһында ванна мейесенең эшен, быяланың иреү температураһын тикшергәндән һуң ул цех буй- …лап китте.

— Һаумыһығыҙ, Степан Иванович! Мейес нисек эшләй, кәмбәҙ изоляцияһы …нисек, — тип мөрәжәғәт итә ул үҙенең …оҙон быуат менән иҫәпләнгән ғүмерен …ошо заводта эшләп үткәргән пенсионер …Ульяновскийға.

— Һаумыһығыҙ, Николай Артемьевич! …Эшләй, нина эшләмәҫкә уға, ул бит беҙ- …ҙең ҡулда, ә беҙ үҙебеҙгә эшләйбеҙ. Пашинтар өсөн түгел бит.

Һәм бында заводтың баш инженеренә …иҫкә төшөрөр нәмәләр күп... Был 1927 …йылда ине. Николай Артемьевич Хлескин …ул саҡтағы йәш специалист үҙенең тәүге рационализаторлыҡ тәҡдимен — ванна мейесенең кәмбәҙен изоляциялау тәҡдимен …бирҙе. Советтәр Союзында быяла производствоһында ванна мейесен камиллаштерергә беренсе булып индерелгән ҡыйыу …ижади фекер ине был. Ошо тәҡдимде производствоға индереү бик яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Быяла эшләү сифаты һиҙелерлек яҡшырҙы. Тиҙҙән мейестәрҙең кәмбәҙҙәрен изоляциялау методын илдең быяла эшләүсе башҡа заводтарына ла индерә башланылар. Был Николай Артемьевич тарафынан ижади эҙләнеүҙәр буйынса …һалынған тәүге, шул уҡ ваҡытта ҙур аҙым ине.

Ләкин быяла эшләү техникаһы, революцияға тиклем булғанынса кустар хәлдә ҡалып килде. Эш ауыр ине. Цехта даими көкөрт газы, быяла өрөүсе 32 килограмм ауырлыҡтағы металл торба менән ям өҫтөндә тороп быяла ҡыуыуы өрҙөрә. Түҙеп тора алмаҫлыҡ эҫе, эҫ һәм даими хәрәкәт эшсене тамам хәлдән тайҙыра.

Иптәш Хлескин быяла етештереүҙе механизациялау хыялы менән йәшәне. Партия һәм хөкүмәт сталинсе беренсе биш йыллыҡта уҡ Красноусол быяла заводын реконструкцияларға һәм механизацияларға ҡарар иттеләр. Ошо ваҡытта ниндәй ҙур энергия менән эшләне Николай Артемьевич!

1931 йылда тамам реконструкцияланып бөткән завод продукция бирә башланы. Машиналар продукция етештереүҙе бер нисә тапҡырға арттырҙылар, ә уның сифаты ниндәй! Әгәр ҙә элек быяла өрҙөрөү кеше тыны менән башҡарылған булһа, хәҙер комсомолец-стахановсы Алсынбай Алтынгуринға, Ғиндулла Ғәрифуллинға реостат баранкаһын бороу етә, ҡатмарлы машина уларҙың ихтыярына буйһоноп, шахта буйынса юғары сифатлы киң быяла таҫмаһын күтәрә башлай.

Сталинсе биш йыллыҡтар йылдарында беҙҙең бик киң илебеҙҙә быға тиклем тарихта күрелмәгән ҙур төҙөлөш эштәре йәйелдерелде. Һәр йыл һайын яңы промышленность үҙәктәре, сталинсе эпоханың ҡалалары үҫеп сыҡты. Сталинсе төҙөлөштәргә күп һәм яҡшы сифатлы быяла кәрәк ине. Быяла заводтары коллективтәре алдына ошондай талаптар ҡуйылыу менән Николай Артемьевич тағы ла ижади эшкә сумды. Һәм тиҙҙән яңы метод уйлап тапты: яңы метод нигеҙендә эшләү һөҙөмтәһендә быялалағы таптар кәмене. Ләкин күтәлгән һөҙөмтәгә ирешелмәне, төҙөүселәрҙең талаптары ҡәнәғәтләндерелмәй ине. Быяланың сифатын тамам яҡшыртыу һәм уның бер ниндәй тапһыҙ сығарылыуына өлгәшеү өсөн Николай Артемьевич Хлескинға ун йыл буйына эш алып барырға тура килде.

... Почтальон заводҡа газеталар килтерҙе. СССР Министрҙар Советының «1950 йылда фән, уйлап табыуҙар, әҙәбиәт һәм искусство өлкәһендә күренекле эштәр өсөн Сталин премиялары биреү тураһындағы» ҡарарында лауреаттар араһында Красноусол быяла заводының баш инженеры Николай Артемьевич Хлескин дә бар ине. Уға табаҡлы быяла етештереүҙә яңы ысул эшләп сығарғаны һәм производствоға индергәне өсөн өсөнсө дәрәжәләге премия бирелгән.

Был көн Николай Артемьевич Хлескинлең ғүмерендә иң ҙур байрам көнө булды. Уны заводтың бөтә эшселәре, мастерҙәре ҡотларға килде. Уны бөтә кеше ҡотланы һәм артабанғы ижади уңыштар теләнеләр. Николай Артемьевич завод кешеләренә был миңең бер үҙемдең хеҙмәтем генә түгел, ә бөтә завод коллективенең хеҙмәте, тип тәрән тулҡынланыу менән яуап бирҙе.

С. Мәүлютов.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Китап һатыу магазине кәрәк

Яңы баҫылып сыҡҡан китаптарҙы киң массаға еткереүҙә сауҙа ойошмаларының роле ҙур. Ләкин Абзан районында китап менән һатыу итеүҙе баһаламайҙар.

Район үҙәгендә 300 уҡыусыһы, 30-ға яҡын уҡытыусыһы булған урта мәктәп бар. Шулай уҡ күп һанда партия, совет активе һәм интеллигенция йәшәй. Улар яңы сыҡҡан политик һәм фәнни китаптарҙы, художестволы әҙәбиәтте алып уҡып барырға теләйҙәр. Ләкин район үҙәгендә китап магазине булмағанлыҡтан, үҙҙәренә кәрәк булған әҙәбиәтте һатып ала алмайҙар. Бында библиотека булһа ла хеҙмәтсәндәрҙең китапҡа булған һорауҙарын ҡәнәғәтләндерә алмай. Сөнки күптәр үҙ библиотекаларын булдырырға теләй. Ә райсоюздың сауҙа бүлеге мөдире иптәш Бойко хеҙмәтсәндәрҙең был урынлы һорауҙары менән бөтөнләй иҫәпләшмәй.

Район үҙәгендә китап һатыу магазине булмауы яңы сыҡҡан әҙәбиәтте киң массаға еткереүҙә ҙур ҡамасаулыҡ яһай.

Д. Мәһдиев,
«Сталинсе» газетаһының секретаре.

Газеталар тулы килмәй

Беҙҙең Матрай районы комсомолецтәре һәм союздан тыш йәштәре республикала комсомол газетаһы сыға башлауын шатлыҡ менән ҡаршылап, уға ҙур теләк менән яҙылдылар. Ләкин ни өсөндөр, яҙҙырылған газеталар тулыһынса килмәй. Мәҫәлән, беҙҙең райондың подписчиктәренә «Ленинец» газетаһының беренсе номере бөтөнләй килмәне. Ә башҡорт телендә сыға торған «Ленинсе» газетаһының 3, 4, 5 һәм 6-сы номерҙәре 141 урынына 119 дана ғына алынды. Шулай уҡ «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы ла йыш ҡына 2-3 данаға кәм ебәрелә.

Подписчиктар яҙҙырған газеталарҙың үҙ ваҡытында һәм тулы тапшырылыуын талап итәләр. Уларҙың был урынлы талабы, һис шикһеҙ, тормошҡа ашырылырға тейеш.

И. Кунсбаев.

Емеш-еләк баҡсаларын тәрбиәләүгә әһәмиәт бирмәйҙәр

Яңауыл районының «Осхон» колхозында иптәш Рәшитов етәкселек иткән баҡсасылар бригадаһы артелгә был йыл һайын 21 — 23 мең һум доход килтерә. Һуңғы йылдарҙа был баҡсала емеш-еләк ағастары үстереүҙә Мичурин методтары ҡулланыла. [illegible]

Ләкин районның башҡа күп колхоздарында емеш-еләк баҡсаларын үстереүгә әһәмиәт бирмәйҙәр. Мәҫәлән, Мажит Ғафури исемендәге колхозда 1,5 гектар майҙанда емеш-еләк баҡсаһы бар. Ләкин уҙ тәрбиәләнмәй. Шул арҡала баҡсаларҙы сортлы алма ағастары, ҡарағат, крыжовник, ҡура еләге һәм башҡа емеш-еләк ағастары ҡыуылып ҡалған. [illegible]

Эреләтелгән колхоздарҙа емеш-еләк баҡсаларын киңәйтеү, уларҙы яҡшы тәрбиәләү, доход биреүсәнлеген күтәреү өсөн көрәш ойоштороу колхоз председателдәренең һәм район ауыл хужалығы бүлеге работниктәренең иң мөһим бурысы.

Ф. Исламов.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Орлоҡтарҙы һауала йылытыу

Яҡшы сифатлы сәсеү орлоғо — юғары урожай үстереүҙең нигеҙе ул. Сәсеүгә сығыуға 2-3 аҙна ҡалғас бөтә орлоҡтар өҫтәмә тикшерелергә һәм кондицияға еткерелергә тейеш. Орлоҡтарҙың юғары сығышлы, эре, бертигеҙ, таҙа һәм ҡоро булыуын, ауырыуҙар менән зарарланмауын тәьмин итергә кәрәк. Тик шундай орлоҡтар ғына юғары сифатлы була алалар.

[illegible]

Агрономия фәне [illegible] шытымлы орлоҡтарҙың сығышын күтәреү мөмкинлеген билдәләй. [illegible] ға һәләтһеҙ булған орлоҡтарҙы кондициялы орлоҡтарға алмаштырырға тәҡдим ителә. Орлоҡтарҙың шытым һәләтлеге орлоҡ-контроль лабораториялары тарафынан үткәрелә.

Һауала йылытып эшкәртеү өсөн алынған орлоҡтар еүеш булмаҫҡа тейеш. Шуға күрә орлоҡтар иң элек дымлығы яғынан сәсеү кондицияһына еткереләләр.

Киптереү юлы менән орлоҡтарҙың сығышын күтәреүҙә бай тәжрибәләр бар. Мәҫәлән, Байҡыбаш районының «Ҡыҙыл Октябрь», «Красный путиловец» һәм Каганович исемендәге колхоздары киптереү сараһын ҡулланып, артыҡ дымлы булған 665 центнер бойҙай орлоғоноң дымлығын 17 проценттан 14 процентка тиклем кәметтеләр, ә сығышын 79 проценттан 92 процентка күтәреүгә өлгәштеләр. Шул уҡ райондың «Алға» һәм «Мировой Октябрь» колхоздарында 374 центнер һолоноң сығышы 75 проценттан 87 процентка еткерелде. Шулай итеп, юғары дымлы орлоҡто киптереү сараһын ҡулланыу менән уның шытым кимәлен күтәрергә мөмкин.

Һауала йылытыу нәмәнән тора? Бында орлоҡ 15—20 градус йылылыҡтағы таҙа һауала билдәле ваҡытта йылына, елләтелә. Бындай сара орлоҡтоң тулы сығышын аяҡҡа баҫтыра.

Йылытыуҙа иң ябай һәм яҡшы ысул — яҙғы йылы асыҡ һауала елләтеү.

Тәжрибәләр ҡояш нурҙары аҫтында йылытыуҙың ҙур файҙалы булыуын күрһәтәләр. Ҡояшта йылытыу өсөн орлоҡ 5—7 сантиметр ҡалынлыҡта таратып һалына. Бының өсөн торпошалар, брезенттәр һәм башҡалар файҙаланыла. Орлоҡ көн буйына 3-4 тапҡыр болғатыла. Бында һалынған орлоҡ, һауа яҡшы булғанда, 4 — 6 көн эсендә өлгәрә.

Келәттәрҙә йәки лапаҫ аҫтында орлоҡтар 20-30 сантиметр тәрәнлектә таратып һалына. Уны тәүге көндәрҙә икешәр, ә һуңға табан көнөнә берәр тапҡыр болғатырға кәрәк. Бында ишектәр һәм тәрәҙәләр асыҡ тотола. Ошо рәүештә орлоҡтар 10 — 15 көн буйы эшкәртелә.

[illegible]

Академик Т. Д. Лысенко шулай уҡ шытымы яғынан кондициялы орлоҡтарҙы ла яҙғы йылы һауала йылытыуҙы тәҡдим итә. [illegible]

Туймазы районы «Яңы тан» колхозында былтыр сәсеү орлоғо яҙғы һауала йылытылды. Ошондай орлоҡ сәселгән 20 гектарҙың һәр береһенән 18,5-әр центнер урожай алынды. Ә һауала йылытылмаған орлоҡ сәселгән майҙанда һәр гектарҙан урожай 14,4-әр центнер тәшкил итте.

Орлоҡтарҙы һауала эшкәртеү сараһын быйыл мөмкин тиклем киң ҡулланырға кәрәк. Республиканың төньяҡ-көнсығыш райондарында был сара мотлаҡ үткәрелергә тейеш. Был эштә агрономдар, агротехниктар инициатива күрһәтергә, колхозсыларҙы өйрәтергә бурыслылар.

Агроном М. Ғәлиев.

Сәсеү орлоҡтарын ағыулау

Иген үҫемлектәрендә һәм орлоҡтарында була торған торон ауырыуҙары урожайҙы бик түбәнәйтә. Шуға күрә бойҙай, арпа, һоло һәм тары культураларындағы торон ауырыуҙарына ҡаршы көрәш ойошторолорға тейеш.

Игендәрҙең торон ауырыуы менән зарарланыуы уларҙың баш сығарыу ваҡыттарында ғына билдәле була. Ә был ваҡытта ауырыуға ҡаршы бер төрлө лә сара күреп булмай. Торон ауырыуы сандарын бөтөрөү өсөн орлоҡтарҙы ағыулап сәсергә кәрәк.

Сәсеү орлоҡтары өс төрлө юл менән ағыулана. Бойҙай һәм арыш орлоҡтарында була торған ҡаты торон санын бөтөрөү өсөн ҡоро ағыулау үткәрелә. Был эштә Давидов һәм АБ препараттары порошок хәлендә ҡулланыла. Давидов препараты — мышьяк ҡатнашлы көслө ағыу. Был препарат бер тонна сәсеү бойҙайын ағыулау өсөн бер килограмм ҡулланыла. Уның менән орлоҡтарҙы хәҙерҙән үк ағыуларға кәрәк. Был препарат менән ағыуланған сәсеү орлоғон яровойлаштырырға ярамай. Сөнки яровойлаштырыу ваҡытында ағыу һыуҙа иреп, орлоҡтоң эсенә инеү менән, уның сығышын түбәнәйтә. АБ препараты бик көслө ағыу түгел. Бер тонна бойҙайҙы ағыулау өсөн 1,5 килограмм ағыу ҡулланыла. Был препарат менән ағыуланған орлоҡто яровойлаштырып сәсергә кәрәк.

Сәсеү орлоҡтарын ҡоро ағыу менән ағыулау өсөн «Идеал», «Урожай» тигән машиналар ҡулланыла. Әгәр ҙә был машиналар булмаһа, ул ваҡытта ябай мискәнең уртаһынан күсәр үткәреп, махсус стапоктарға урынлаштырып әйләндерелә. Ағыулау ваҡытында маска кейеп, йәки ауыҙ һәм танауҙы яулыҡ менән бәйләп эшләргә кәрәк.

Ярым ҡоро ағыу менән ағыулау — тарыла санлы торон, һолола санлы һәм ҡаты торон спораларын бөтөрөү өсөн үткәрелә. Сәсеү алдынан ағыуланырға тейешле булған таҙа орлоҡ келәт иҙәненә 15 — 20 сантиметр ҡалынлыҡта тигеҙләп таратыла һәм өҫтөнә 40 процентле бер литр формалинга 80 литр һыу ҡушып әҙерләнгән иретмә лейка менән һибелә. Шул уҡ ваҡытта орлоҡ көрәк менән болғатыла. Унан һуң орлоҡ бер урынға өйөлә һәм брезент менән ябылып 2 сәғәт тотола. Был ваҡыт эсендә формалин парлана һәм торон сандарын юҡҡа сығара.

Сәсеү орлоҡтарын бер үк ваҡытта ағыулауҙы һәм яровойлаштырыуҙы үткәрергә мөмкин. Ул түбәндәгесә эшләнә: яровойлаштырыу өсөн билдәләнгән һоло орлоғо иҙәнгә 20 — 25 сантиметр ҡалынлығында таратып һалына. Бының һуңында һәр 100 килограмм һолоно сылатыу өсөн 35 литр һыу алына һәм һоло һыу менән өс тапҡыр сылатыла. Беренсе тапҡыр сылатыуҙа һәр 100 килограмм һолоға 12 литр һыу, икенсе тапҡыр сылатыуҙа һололағы торон сандарын ағыулау өсөн бер литр 40 процентле формалинга 80 литр һыу ҡушылып әҙерләнгән формалинле һыу һибелә. Тигеҙ еүешләнһен өсөн орлоҡ көрәк менән болғатыла. Унан һуң орлоҡ көшөлгә әйләнеп, брезент менән ике сәғәт ҡаплап тотола. Бына ошо ваҡыт эсендә формалин парланып, торон ауырыуы сандарын бөтөрә. Бынан һуң, көшөлдәге һоло иҙәнгә 20 — 25 сантиметр ҡалынлығында таратыла һәм көн һайын 2-3 тапҡыр болғатыла. 20 — 24 сәғәттән һуң был орлоҡто аҙаҡҡы тапҡыр 11 литр иҫәбенән һыу менән еүешләтеп, инде яровойлаштырыу тәртибендә эш ителә. Ошо рәүешсә яровойлаштырыу 10 — 14 көн дауам итә. Яровойлаштырылған һоло 10 — 12 проценте шыта башлағас сәселә. Бында сәсеү нормаһы арта. Һәр гектарға 150 килограмм һоло сәсеү нормаһы булғанда, ярым ҡоро ағыуланған һәм яровойлаштырылған орлоҡ һәр гектарға 185 килограмм була.

Сәсеү орлоҡтарын ҡоро һәм ярым ҡоро ағыуҙар менән ағыулау өсөн кәрәкле булған препараттарҙы район ауыл хужалығы ер бүлектәре аша «Сельхозснаб» складтарынан алырға була.

Агроном Ә. Әхтәмов.

Квартал планы уңышлы үтәлде

«Башнинцетрест» системаһына ингән предприятиеләр, май алды социалистик ярышына ҡушылып, дүрт айлыҡ производство программаһын срогынан алда 22 апрелгә үтәү өсөн көрәшәләр. Трест март айы планын валовой продукция етештереү буйынса 155 процентка үтәне, ә 1 кварталда ул 140 процент үтәлеш бирҙе.

Бөтә предприятиеләрҙә лә хәҙер социалистик ярыш йәйелдерелде. Улар араһында Туймазы, Бүҙәк кошсолоҡ комбинаттары коллективтәре айырыуса юғары производство күрһәткестәренә өлгәшәләр.

А. Кучуков.

…ла тап шундай күренеш бик оҫта …һәм тапҡыр тотоп алынған. Һәм, әйтергә кәрәк, был мәҡәл хәҙерге көндә лә бик йыш ҡулланыла. Ләкин ул инде элекке мәғәнәлә түгел, бөтөнләй яңы мәғәнәлә, һәр кем үҙенә тапшырылған эш участкаһында халыҡ ҡараусыларҙы фашлау, ялҡауҙарҙан көләү, социалистик хеҙмәткә еңел ҡараусыларҙы тәнҡитләү өсөн ҡулланыла.

Бындай миҫалдарҙы, әлбиттә, күп килтерергә мөмкин. Ләкин беҙҙең маҡсат яңы мәҡәлдәр тураһында фекер йөрөтөү булғанлыҡтан, был турала шуның менән һүҙҙе туҡтатабыҙ.

Яңы мәҡәлдәр, юғарыла әйтелгәнсә, революцияның тәүге йылдарынан уҡ донъяға килделәр һәм халыҡтың үҙе менән бергә, иҫке тормошто емереп, яңы социалистик тормошто ҡороуҙа актив ҡатнашлыҡ иттеләр, боевой ҡорал булып йөрөнөләр.

Элекке Россия ерендә йәшәүсе бөтә халыҡтарҙы берләштереп, берҙәм һәм ныҡ…лы Совет государствоһы төҙөү эшен халыҡ ошондай мәҡәлдәр менән нығытты: **«Айырылған ил туҙа, берләшкән ил уҙа»** — **«Берлек барҙа, — тереклек бар»** — **«Халыҡ дуҫлығы — ил байлығы»** һәм башҡа шундай матур мәҡәлдәр тыуҙы. Ә бөйөк Сталин етәкселегендә, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ нигеҙендә тыуған көслө Советтар иле тураһында: **«Сталин — халыҡ йөрәге, СССР — тыныслыҡ терәге»** тигән гүзәл мәҡәл барлыҡҡа килде.

Шуны ла әйтергә кәрәк: халыҡ ижадының башҡа тармаҡтарына яҙма әҙәбиәттең йоғонтоһо ҙур булған кеүек, мәҡәлдәрҙең үҫешендә лә был йоғонто ҙур булды. Был күренеш бигерәк тә ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа грамотаһыҙлыҡты бөтөрөп, халыҡты культураға, китапҡа, газетаға, аң-белемгә ныҡлы ылыҡтыра башлағас килеп тыуҙы. Элек наҙан булып килгән йөҙәр меңләгән халыҡ үҙ ҡулы менән тотоп китап, газета, журнал уҡый башланы. Улай ғына ла түгел, йөҙ меңләгән хеҙмәтсән халыҡ туранан-тура государство менән идара итеү эшенә ылыҡтырылды һәм улар һәр бер яңы нәмәне актив элеп алыусы һәм тормошҡа атҡарыусы кешеләр булып киттеләр. Бына шуның өсөн дә инде йәш Совет государствоһы алдында торған яңы бурыстар, яңы лозунгылар, күпселектә шул уҡ газета-журналдар аша халыҡ алдына бик тиҙ барып етә торған булдылар. Һәм был лозунгылар тормоштоң иң мөһим яҡтарын сағылдырғанға күрә, бик тиҙ элеп алына һәм бик интенсив тарала килделәр. Килә-килә уларҙың күбеһе мәҡәл урынына ҡулланыла башланы.

Бына ошондай юл менән йәғни әҙәби сығанаҡ аша барлыҡҡа килгән лозунг-мәҡәлдәр үҙҙәренең йәшәү майҙандарын йылдан-йыл киңәйтә килделәр. Улар йылдан-йыл үҫәләр һәм мәҡәл жанрының яңы бер ижад төрө булып формалаша киләләр.

Мәҫәлән, аң-белемгә эйә булырға өндәү заманында тыуған мәҡәлдәрҙе ҡарап үтәйек: **«Газета—ут, мәҡәлә — уҡ»— «Белем байлыҡтан ҡәҙерлерәк» — «Аң-белем, — мәңгелек ғилем» — «Белем китаптың эсендә лә, тышында ла була»** һәм башҡалар.

Шулай уҡ әҙәбиәт йоғонтоһо аша тыуған политик эстәлекле, үткер мәҡәлдәрҙе күп һанда осратырға мөмкин. Улар күбеһенсә Советтәр иленең эске төҙөлөшөн һәм тышҡы политикаһын сағылдыралар. Сталин Конституцияһының мәңге һүнмәҫ ҡояшы аҫтында йәшәүсе совет халҡының иркен, бәхетен, тормошон, хеҙмәтен күрһәтәләр, Совет иленең тәрән аҡыл, хеҙмәт һәм ғәҙеллек иле икәнен дәлилләйҙәр. Бына улар: **«Революция бирер, Конституция беркетер», «СССР — тыныслыҡ терәге» — «Сүкеш менән ураҡ алыр ер шарын урап» — «Беҙҙең Советтар илен-де хоҡуҡ бирелде хеҙмәткә, ялға һәм белемгә»** һәм башҡалар.

Шуныһы характерлы: Совет илендәге был уңыштар, совет халҡының тормошондағы ыңғай үҙгәрештәр һәм халыҡтың ҡаҙаныштары, бөтәһе лә, халыҡ мәҡәлдәрендә бөйөк Сталин исеме менән бәйләнәләр. Халыҡ ижадының башҡа тармаҡтарындағы кеүек үк, мәҡәлдәрҙең дә иң гүзәл, иң тәрән мәғәнәле, иң бай өлөшө иптәш Сталинға арналған. Бөйөк юлбашсының гениаль аҡылы һәм халыҡ бәхете өсөн алып барған эшмәкәрлеге тураһында халыҡ үҙенең йөрәгенән сыҡҡан ябай, үткер һәм көслө һүҙҙәр менән баһа биреп, йомғаҡлап үтә. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: **«Сталин нимә әйтер, уны бөтә донъя ишетер» — «Сталин — белә ул, бөтәһен дә күрә ул, әйтер һүҙен әйтә ул, күңелгә ярып бирә ул» — «Сталин— беҙҙең ҡояш»—«Сталин—беҙҙең атай»— «Етәксебеҙ — компартия, юлбашсыбыҙ— Сталин»** һәм башҡалар.

Мәҡәлдәр бөгөнгө ысынбарлыҡтың һәр төрлө яғын сағылдырып киләләр. Юғарыла килтерелгән матур өлгөләр өҫтәүенә конкрет эш тармаҡтарына арналған, айырым конкрет темаларҙы сағылдырған мәҡәлдәр күп. Мәҫәлән, коллективлашеү темаһын сағылдырған мәҡәлдәрҙе күрһәтеп үтергә мөмкин: **«Артелдең эшы ҡуйы була» — «Күпселек ҡайҙа—көс шунда» — «Бергәнеке—берегәйле» — «Яңғыҙ тирәк өй булмаҫ, яңғыҙ кеше бай булмаҫ» — «Күл тамсынан йыйыла» — «Тамсы тама тора, биҙрә тула тора» — «Күмәкләп тотонған — яу ҡайтарған»— «Берлектә—көс» — «Берлектә — тереклек»** һәм башҡалар.

Былар бөтәһе лә берҙәм коллектив булып ойошоп йәшәүҙең яҡшылығын үҙ тормошонда һынап ҡараған халыҡ йөрәгенән сыҡҡан, ысын тормош ҡулланмаһы хеҙмәтен үтәйҙәр. Ләкин халыҡ быңын менән генә лә сикләнеп ҡалмай. Ул коллектив тормоштоң иң мөһим өлөшө булған коллектив хеҙмәт тураһында ла үҙенең үткер һүҙен әйтә. Шулай итеп, колхоздағы хеҙмәтте сағылдырған мәҡәлдәр барлыҡҡа килделәр. Бына уларҙың ҡайһы берҙәрен килтереп үтәйек: **«Эш бергәләп эшләгәндә генә ырай ул» — «Эшләмәһәң эш кемә, ни ашарһың ҡыш көнө» — «Хеҙмәт кенен кеҙ кенә иҫәпләйҙәр» — «Уңған кеше шул булыр: хеҙмәт көнө мең булыр» — «Эшләһәң ныҡ эшлә, күҙ кейеге булып йөрөмә» — «Ҡағын, һөртөн дә, тағы эшкә тотон» — «Ялҡау кеше тин торор, уңған кеше барыһын да арттырыр» — «Эшләгән кеше туҡ булыр, эшләмәгән юҡ булыр» — «Эшләгеҙ тырышып, бер-берегеҙгә булышып» — «Яҡшы эшләгән—уңған, ударник булған»** һәм башҡалар.

Шулай уҡ колхоздың эске тормошон, эште ойоштороу тәртибен сағылдырған мәҡәлдәр ҙә бар: **«Иҫәпһеҙ колхоз — ишекһеҙ йорт» — «Уңған счетоводтың эше бәшкә: сут төймәһе шартлап тора, иҫәп эше ялтырап тора» — «Халыҡ һүҙен ташлама, кеше ҡаҙығын ашама» — «Уңыған кеше китапһыҙ булмаҫ, колхоз эше Уставһыҙ булмаҫ»** һәм башҡалар.

Юғарыла килтерелгән мәҡәлдәр колхоз тормошо аша ингән яңы күренештәрҙе, хеҙмәткә һәм общественный милеккә ҡарата тыуған яңы мөнәсәбәттәрҙе күрһәтәләр һәм улай ғына ла түгел, ошо яңылыҡты ҡыҫҡаса һығымта рәүешендә үткерләштереп, законлаштырып бирәләр.

Беҙҙә әле яңы мәҡәлдәр бик аҙ йыйналған һәм улар араһында промышленность эшселәре тормошон сағылдырған мәҡәлдәр бигерәк аҙ. Ләкин был промышленность эшселәре араһында ижади тормош юҡ икән, тигән һүҙ түгел. Киреһенсә, заводтарҙа, фабрикаларҙа, промыслаларҙа, шахталарҙа эшселәр араһында ижад активлеге бик ҙур. Ләкин ул өйрәнелмәгән. Шулай ҙа инде беҙ эшселәр араһындағы ҡайнар тормошто, социалистик хеҙмәтте сағылдырған мәҡәлдәр күрһәтә алабыҙ. Бына нефтселәр араһында ишетелә торған мәҡәлдәр һәм әйтемдәрҙең бер нисәһе: **«Көс түкмәй, нефть сыҡмай» — «Нефтең сыҡһын әле, шунан маҡтанырһың!» — «Бораулау эше туралыҡты ярата» — «Нефть ҡәҙерен ағыусы белмәй, табыусы белә»— «Нефтсе нефтте таш аркыры күрә» — «Туҡтатма фонтанды, бәрһен әйҙә!»** һәм башҡалар.

Производство мәҡәлдәре күбеһенсә совет эшселәренең намыҫлы хеҙмәтен сағылдыралар һәм совет эшселәре араһында урынлашҡан алдынғы тенденцияларҙы күрһәтәләр.

Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла бик ныҡ таралдылар. Патриотик теманы сағылдырған борондо мәҡәлдәрҙе файҙаланыу менән бер рәттән күп һанда бөтөнләй яңы мәҡәлдәр тыуҙылар. Был мәҡәлдәр күбеһенсә фронтҡа китеүсе совет йәштәренә, алдынғы егеттәргә халыҡ наказы, ил наказы булып яңғыранылар. Мәҫәлән, ошондай мәҡәлдәрҙе күрһәтергә мөмкин: **«Ир егет үҫә өсөн тыуа, илә өсөн үлә»— «Ир егеттең ике юлдашы бар: береһе батырлыҡ, икенсеһе тәүәккәллек» — «Ир егеттең үҙе үлһә лә даны ҡала» — «Батырҙы яу тыуҙыра» — «Батыр яуҙа беленер» — «Аттың матурлығы башында, һалдаттың матурлығы төшөндә» — «Үҙең батыр булһаң, иптәшең дә батыр була» — «Аттың даны егет ҡулында, егеттең даны үҙ ҡулында» — «Аттың яҡшыһы алға сыға, егеттең яҡшыһы данға сыға»** һәм башҡалар.

Ватан һуғышы һәм фронт шарттарында тыуған мәҡәлдәр ҙә бик күп. Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһы һалдаттары араһынан яҙып алынған мәҡәлдәрҙе алып ҡарағанда, уларҙың һалдат тормошондағы иң мөһим, иң әһәмиәтле хәлдәрҙе сағылдырып, һалдаттар өсөн ҡулланма була алырлыҡ үткер һәм тапҡыр әйтелгән наставление булып яңғырағанын күрәбеҙ. Мәҫәлән: **«Ат арымай тау менгәнгә, арымай юртып килгәнгә, арый ҡарай бәлмәгәнгә».** — **«Ҡабаландың аты өҙлөгә, ялҡауҙың аты һәрлегә» — «Кавалерист батыр булһын, аты таҙа, матур булһын» — «Ата бәлмәгән атыкан күрер, ҡайтып килеп иптәшенән күрер» — «Ялҡау кавалеристең аты күп ярау итә» — «Сөйгәнеңдә үҙең эс, шакәреңдә атыңа ашат» — «Командиреңә ярайһың килһә, ағай, — тимә, — давай, — тиң»** һәм башҡалар. Ошо уҡ ыңғайҙа ниндәйҙер һамаҡ менән бәйләнештә тыуған бер мәҡәлде ҡарап үтәйек. Ул: **«Разведчик булһын үткер, сабельник булһын сапҡыр, связной булһын осҡор, адъютант булһын тапҡыр, иптәшең булһын йылғыр, атың булһын айғыр».** Формаһы менән һамаҡҡа яҡын торған был әйтемдең (дәрәсәрәге мәҡәл) аша шулай уҡ, наставление кимәленә күтәрелгәнен күрәбеҙ.

Яңы мәҡәлдәрҙе бигерәк тә халыҡ араһында көндәлек эш алып барыусы агитаторҙар, пропагандистәр, етәкселек эшендәге иптәштәр күберәк ҡулланыусан булалар. Әлбиттә, уларҙың көндәлек эшендә мәҡәлдәр һәм әйтемдәр ҙур ҡорал булып торалар һәм йыш ҡына ул иптәштәр үҙҙәре лә ишнан яңы мәҡәлдәр тыуыуына сәбәпсе булалар.

Бына, ҡыҫҡаса алғанда, яңы мәҡәлдәр һәм әйтемдәр менән эш шулай тора. Улар әле формалашыуҙа дауам итәләр. Һәр ваҡыт яңынан яңы мәҡәлдәр тыуа, алданыраҡ тыуғандары шымара бара һәм, әнә шулай итеп, тормоштоң эсендә тыуған ижад процесен күҙ алдына килтерергә мөмкин. М. И. Калинин әйткәнсә, ваҡыт үтеү менән халыҡ әнә шулай үҙ ижадын шымарта, яҡшырта һәм аҫыл таш кеүек ялтырарға мәжбүр итә.

КОЛХОЗ КОШСОЛОК ФЕРМАЛАРЫ

Республикабыҙҙың инкубатор-кошсолок станциялары 1951 йылда колхоздарҙың кошсолок фермаларына 5 миллион себеш тапшырырға тейештәр. [illegible]

[illegible]

Ж. Жебаров,

БАССР Ауыл хужалығы министерствоһы инкубатор-кошсолок станциялары трестының директоры, кошсолок буйынса зоотехник.

ШАШКА БУЙЫНСА РСФСР-ҙа БЕРЕНСЕЛЕК ӨСӨН ЯРЫШ

Өфө ҡалаһында шашка буйынса РСФСР-ҙа беренселек өсөн ярыш тамамланды. [illegible]

А. Жаров.

Бригадирҙар семинары

Ошо көндәрҙә [illegible] районында бригадирҙарҙың квалификацияларын күтәреү маҡсаты менән ике аҙналыҡ семинар уҙғарылды. Унда бөтәһе 33 кеше ҡатнашты.

Бригадирҙар семинар программаһынан тыш халыҡ-ара хәл тураһында доклад тыңланылар һәм уҙған йылдарҙағы эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар. Семинарҙа ҡатнашыусылар бигерәк тә «Фәнгә», Ленин, Сталин исемендәге колхоздарҙың бригадирҙары Ниғмәтьянов, Ситдиков, Садретдинов иптәштәрҙең сығыштарын ҡыҙыҡһынып тыңланылар. Улар бригадала хеҙмәтте ойоштороу, эштә сифат өсөн көрәш, баҫыусылыҡ бригадаһы бригадирҙарының ролен күтәреү тураһында һөйләнелар.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Аньяр. Сталин исемендәге әрләтелгән колхоз члены Дәүләтбаев Йомағужа күп йылдарҙан бирле һунарсылыҡ итә. Ул 1950—1951 йылғы сезонда Заготживсырьеға 53 төлкө, 63 ҡуян тиреләре тапшырҙы, һәм ошо тапшырылған тиреләр өсөн ҙур суммала аҡса менән бүләкләнде.

F. Идрисов.

Раевка. Сталин исемендәге әрләтелгән ауыл хужалығы артеле членларының дөйөм йыйылышы колхоздың 1951 йылға производство планын ҡабул итте. Был план нигеҙендә быйыл тотош майҙандарҙа һәр гектарҙан кәмендә 14,5-әр центнер урожай алынырға, һәр бер һауын һыйырҙан 2000-әр литр һөт һауып алынырға тейеш.

Дөйөм йыйылыш яҙғы сәсеү осорона эш планы раҫланы. Колхозсылар май алды социалистик ярышына ҡушылдылар.

М. Нагаев.

Яңауыл. Крупская исемендәге әрләтелгән колхоздың членлары Бүздәк районы Ворошилов исемендәге колхоздың газетала нәшер ителгән перспектив планын өйрәнделәр. Ошо нигеҙҙә колхоздың перспектив планы төҙөлдө. Был план колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында ҡабул ителде.

Шаран. Әрләтелгән колхоз председателдәренең ун биш көнлөк семинары башланды. Унда политик, фәнни һәм экономик темаларға лекциялар уҡыла, колхоз производствоһы тураһында докладтар тыңлана.

Салауат районы Малояз МТС-ының комбайнеры Мәүлет Сиражиев Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә ҡатнашыуға кандидат итеп күрһәтелде. Ул былтыр үҙе йөрөй торған комбайн менән 501 гектарҙың урожайын йыйҙы, 5700 центнер иген һуҡты.

В. Кондров.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 7 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Сит ил эштәре министрҙәре Советының көн тәртибен әҙерләү өсөн саҡырылған дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары кәңәшмәһенең бөгөнгө ултырышында Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

Өс көнбайыш держава вәкилдәре көн тәртибендәге беренсе пункт буйынса 4 апрелдә СССР делегацияһының тәҡдим иткән редакцияһына ҡаршы сығыуҙарын дауам иттеләр һәм үҙҙәре тарафынан 2 апрелдә индерелгән формулировканы үткәрергә тырыштылар.

Бынан элек хәбәр ителгәненсә, СССР вәкиле Громыко элекке ултырышта яһаған сығышында өс держава тәҡдименең ҡуралата ҡәнәғәтләнмәҫлек булыуын күрһәткәйне. Сөнки ул тәҡдим Германияны демилитаризациялау кеүек ошондай мөһим проблеманы артҡы планға ҡуя һәм дүрт державаның ҡоралланыуын һәм ҡоралды көстәрен кәметеү бурысын һәр төрлө икеле формулировкалар менән күмеп ҡалдырыуҙы маҡсат итеп тота.

Дәвис менән Джессептең, йәнәһе, уларҙың хөкүмәттәре ҡоралды көстәрҙе кәметеү тураһындағы мәсьәләне ҡарарға серьез рәүештә ниәтләйҙәр, тигән икейөҙлө белдереүҙәренә ҡағылып, СССР вәкиле Громыко былай тине:

— Үкенескә ҡаршы, фактлар уларҙың белдереүҙәрен раҫламайҙар. Был, АҠШ менән Великобритания хөкүмәттәренең ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәметеү тураһында СССР хөкүмәте тәҡдимдәренә кире мөнәсәбәттә булыуҙарынан да асыҡ күренә. Был мәсьәләне «халыҡ-ара кимәлдә», йәғни БМО-ла тикшереү ыңғай һөҙөмтәләр бирмәгәнлектән, Совет хөкүмәте ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәметеү проблемаһын дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре Советының ҡарамағына тапшырырға тәҡдим итә.

АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре,—тине унан ары Громыко, — ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәметеү бурыстарын хәл итеүгә ниндәйҙер яңы тырышлыҡтар һәм яңыса яҡын килеү кәрәклеге тураһында һөйләйҙәр. Ләкин, Совет хөкүмәте ошондай яңыса яҡын килеү юлын тәҡдим иткәс, Дәвис менән Джессеп быға ҡаршы килеләр һәм СССР хөкүмәтенең ҡоралланыуҙы кәметеүгә өлгәшергә ниәтләүенең серьезлығына «шик» белдерә башлайҙар. Өс держава вәкилдәренең бындай белдереүҙәре ҡуралата урынһыҙ белдереү булып тора. Бындай урынһыҙ һүҙҙәрҙе бары тик өс держава вәкиленең бәхәсләшеү ниәте менән генә аңлатыла. Ә ул бәхәсләшеү ниәте шунан килеп сыҡты, ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәметеү тураһындағы мәсьәләне АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең рәмәлдә тикшерергә теләүҙәренә Совет делегацияһы кисәге ултырышта серьез шик булыуын белдергәйне һәм улар өс державаның был мәсьәләлә ысын позициялары тураһында общественность фекерен бутау ниәте менән бөтә эште ҡоро декларацияларға ғына ҡайтарып ҡалдырырға тырышмайҙармы икән, тип шик белдергәйне.

Дәвистең, министрҙәр Советында дискуссия ниндәй йүнәлештә барырға тейешлеген көн тәртибе күрһәтергә тейеш түгел, тигән белдереүенә яуап итеп, Громыко былай тине:

— Әлбиттә, беҙ бында әҙерләгән көн тәртибе министрҙәр Советы сығарасаҡ ҡарарҙы алдан әҙерләп ҡуйырға тейеш түгел. Ләкин, көн тәртибе мәсьәләләрҙе тарауҙа дөйөм йүнәлеш күрһәтергә, тыныслыҡты нығытыу һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу бурыстарына яуап бирерлек йүнәлеш күрһәтергә тейеш түгел, тип иҫәпләү хата булыр ине.

Ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәметеү тураһындағы мәсьәлә буйынса Совет тәҡдиме тап ошо дөйөм йүнәлешкә тура килә лә, һәм тыныслыҡты нығытыу, Европалағы обстановканы яҡшыртыу һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәтте яҡшыртыу талаптарына тура килә лә.

Ҡоралланыуҙы кәметеү тураһындағы мәсьәләне тикшереүҙе ҡоралланыуҙың кимәле тураһындағы мәсьәлә менән алмаштырыуҙы күҙҙә тотоусы үҙ формулировкаларын яҡлап, өс держава вәкиле тарафынан килтерелгән дәлилдәрҙең нигеҙһеҙ булыуын Громыко яңынан күрһәтте.

— Өс держава вәкилдәренең белдереүҙәренән шул күренә, тине Громыко, уларҙың тәҡдимендә төп мәсьәлә, төп бурыс — ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәметеү ҡоралланыуҙың кимәле тураһындағы хосуси мәсьәләгә ҡайтып ҡала. Бындай формулировканың шуға килтереүе мөмкин, ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәметеү тураһындағы төп мәсьәләнең, элек Милләттәр Лигаһында нисек булған булһа, тап шул рәүешлә ҡоралланыуҙың һәм ҡоралды көстәрҙең кимәле тураһындағы буш һүҙҙәр һәм декларациялар эсенә күмелеп ҡалыуы мөмкин. Өс державаның тәҡдиме тап шуға алып бара, бында, өс держава вәкилдәренең кәңәшмәһендә Джессеп, Дәвис һәм Пароди беҙҙе тап шуға алып баралар.

Көнбайыш державаларҙың вәкилдәре, ҡоралланыуҙың кимәле тураһындағы мәсьәләне беренсе планға ҡуйып, беҙ ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәметеү тураһындағы мәсьәләнең әһәмиәтен күпме лә булһа һанға һуҡмай ҡалдырыуҙы күҙҙә тотмайбыҙ, тиҙәр. Ләкин әгәр ҙә был шулай икән, дүрт держава ҡоралланыуын һәм ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы төп мәсьәләне көн тәртибендә беренсе урынға ҡуйыуға ни өсөн улар ҡаршы килеләр икән, аңлашылмай. Совет делегацияһы, тине һүҙен тамамлап Громыко, үҙ тәҡдимдәрен ҡабул итеүҙе ныҡышып, сөнки ул тәҡдимдәр халыҡтарҙың талаптарына, тыныслыҡты тәьмин итеү интерестәренә һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға тура килеләр.

Көнбайыш Германия хеҙмәтсәндәре ремилитаризациялауға ҡаршы көрәшәләр

БЕРЛИН, 8 апрель. (ТАСС). АДН агентствоһының хәбәрҙәренә ҡарап фекер йөрөткәндә, Көнбайыш Германия халҡының ремилитаризацияға ҡаршы көрәше әленәлә әле активерәк характер ала бара. Вальдгеймда (Аахенға яҡын) Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда ярашыу договоры төҙөүҙе яҡлап халыҡтың фекерен һорашыуҙы үткәреү өсөн комитет төҙөлдө, тип хәбәр ителә. Комитет төрлө диндәге һәм төрлө политик ҡараштағы граждандарҙың вәкилдәренән тора. Халыҡтың фекерен һорашыу эшен үткәреү өсөн ентекле план төҙөлгән.

Бонн «хөкүмәтенең» башлығы Аденауэрға ебәрелгән асыҡ хатта комитет Көнбайыш Германияла һуғышҡа әҙерләнеүҙәргә ҡаршы ҡиҫкен протест белдерә. «Яңы һуғыш ҡурҡынысы алдында, — тип әйтелә хатта, — беҙ, Вальдгейм общинаһының граждандары, — католиктәр, социалистәр һәм партияһыҙҙар, өй хозяйкалары, эшселәр һәм интеллигенция вәкилдәре — ремилитаризацияны һис кисекмәҫтән туҡтатыуҙы талап итәбеҙ.

Беҙ һәр төрлө хәрби һәм ярым хәрби соединениеләрҙең таратылыуын, шулай уҡ Көнбайыш Германия заводтарында аҡылдан шашынып ҡорал етештереүҙең туҡтатылыуын талап итәбеҙ. Беҙ уның катастрофик эҙемтәләрен иң кәрәкле аҙыҡ-түлек продукттары һәм көн ҡулланыу тауарҙары хаҡының ҡимматләнеүе формаһында көн һайын үҙ елкәбеҙҙә һиҙәбеҙ».

«Һуғыш йәки тыныслыҡ, Аденауэр әфәнде, был немец халҡының тормошо өсөн ҡиҫкен мәсьәлә булып тора, — тип әйтелә унан ары хатта. — Беҙ, Көнбайыш Германияла йәшәүселәр, беҙҙең ватаныбыҙ яңынан бомбаға тотолмаһын өсөн һәм, Корея халҡы кеүек үк, беҙгә лә яфа сигергә тура килмәһен өсөн, беҙҙең талаптарыбыҙҙы яҡлауыбыҙҙы һеҙҙән талап итәбеҙ».

Бременден алынған хәбәрҙәргә ҡарағанда, Грепелинген общинаһында (Бременгә яҡын) йәшәүсе 800 кеше тыныслыҡты яҡлауға арналған митингела ремилитаризацияға ҡаршы һәм 1951 йылда ярашыу договоры төҙөүҙе яҡлап халыҡ фекерен һорашыуҙы ойоштороу өсөн комитет һайлаған.

Митингела Грепелинген халҡына мөрәжәғәт ҡабул ителгән, унда былай тип әйтелә: «Ремилитаризация өсөн бер генә тин дә, бер кеше лә бирмәҫкә! Бөтә көстә тыныслыҡты һаҡлау өсөн туплаҫға!».

Бремен пасторы Оберхоф Көнбайыш Германияла йәшәүсе бөтә халыҡҡа мөрәжәғәт итеп, былай тине: «Әгәр ҙә немец халҡы империалистәр интересен яҡлау хөрмәтенә ҡулына ҡорал алыуҙан ҡиҫкен рәүештә баш тартһа, ул ваҡытта һуғыш тоҡандырыусылар провокацион юл менән өсөнсө бөтә донъя һуғышын башлай алмаҫтар». Ул, Көнбайыш Германияла йәшәүсе халыҡтың 80 — 90 проценте Бонн «хөкүмәте» политикаһына ҡаршы сығыш яһай һәм тыныслыҡ өсөн көрәшеүселәрҙең көстәре арта бара, тине. Пастор Оберхоф үҙенең һүҙен йомғаҡлап, былай тине: «Эштең тоғролоған аңлау, үҙ намыҫыбыҙҙың саф булыуын аңлау, немец халҡының 90 проценте беҙҙе яҡлағанлығын аңлау беҙҙе көслө яһай, һәм шуға күрә беҙ һуғышты еңәсәкбеҙ».

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 9 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе бөгөн ошоларҙы хәбәр итте: Халыҡ армияһы частәре Ҡытай добровольцтары отрядтәре менән берләшеп хәрәкәт итеп, бөтә фронттарҙа ла көслө оборона һуғыштары алып барыуҙа дауам иттеләр һәм дошмандың йәнле көсөнә һәм техникаһына ҙур юғалтыуҙар килтерҙеләр.

Үҙәк фронтта Халыҡ армияһы частәре уҙған бер нисә көн эсендә дошмандың 2300-ҙән артыҡ һалдатын һәм офицерын, шул иҫәптән, Американың 700-ҙән артыҡ һалдатын һәм офицерын юҡ иттеләр һәм яраланылар. Дошмандың 6 танкыһы һәм 4 автомашинаһы юҡ ителде.

Бөйөк тыныслыҡ эше[...] күренекле көрәшселәр[...] халыҡ-ара Сталинсе пре[...] лауреаттарын бөтә прог[...] кешелек донъяһы хөрмә[...]

Франция

ПАРИЖ, 8 апрель. (ТАСС). [...] лыҡтың халыҡ-ара Сталинсе прем[...] реаты, тыныслыҡты яҡлаусылар[...] тенең күренекле деятеле, атаҡлы[...] цуз ғалиме Фредерик Жолио-Кюри[...] ните» газетаһының хәбәрсеһенә [...] седала былай тине: «Мин бөгөн [...] нән үҙемә «Халыҡтар араһында [...] лыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара Ст[...] премия бирелгәнлеген белеп, тар[...] ҡынландым. Мин достоин булған [...] лыҡ премияһы минең өсөн тағы [...] лыҡтан бигерәк мөһим, сөнки ул [...] лыҡ эшенә үҙемең төрән бирелг[...] дамын иҫбат итеүсе бөйөк халыҡ һ[...] жюри тарафынан билдәләнгән».

Тыныслыҡтың халыҡ-ара Сталинсе [...] мия лауреаты Эжени Коттон «[...] газетаһының хәбәрсеһенә былай т[...]

«Тыныслыҡ өсөн көрәштә ҡатын[...] ҙарҙың тырышлығы шундай юғары [...] алыуы менән мин ысын-ысындан [...] лемен. Ҡатын-ҡыҙҙар ныҡлы тын[...] өсөн көрәштә бөйөк көс булып [...] Ҡатын-ҡыҙҙарҙың халыҡ-ара демо[...] федерацияһына һәм француз ҡатын[...] ҙары Союзына берләшкән бөтә [...] ҡыҙҙар минең йөҙөмдә ошо награда[...] тоин булдылар. Бөгөн маҡтаулы[...] йыҡлы булған бөйөк хәрәкәттә [...] ҡыҙҙарҙың ҡатнашыуы арҡаһында [...] ныслыҡ өсөн көрәштең бик ҙур ел[...] малыҡ менән барғанлығын мин а[...] әйтеп үтергә тейешмен. Мин тағы [...] ны әҫтәргә тейешмен, был премия [...] лыҡты яҡлаусы бөйөк Сталин исе[...] булыуы айҡаплы, тағы ла ҙурыраҡ [...] миәт ҡаҙана».

Польша

ВАРШАВА, 8 апрель. (ТАСС). По[...] ла сыға торған бөтә газеталар [...] «Халыҡтар араһында тыныслыҡты [...] тыу өсөн» халыҡ-ара Сталинсе премия[...] реү тураһындағы хәбәрҙе нәшер ит[...]

«Трибуна люду» газетаһы үҙенең [...] мәҡәләһендә, тыныслыҡ һүҙе СССР [...] һүҙ менән айырылғыһыҙ бәйләнгән, сөнки [...] циализм иле тыуыу менән тарихта бере[...] сө тапҡыр һуғыш тоҡандырыу менән [...] ҙыҡһынмауҫы государство барлыҡҡа [...] де, тип һыҙыҡ өҫтәнә ала. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының [...] ҙөмтәһендә, тарихта беренсе шундай [...] ролош барлыҡҡа килде, унда һуғыш [...] нән һәм һуғышып сит илдәрҙе [...] алыу менән ҡыҙыҡһыныусы [...] синыф түгел, ә тыныслыҡты [...] юғары баһалаусы хеҙмәтсән халыҡ [...] идара итә.

Тыныслыҡ, тигән һүҙ, — тип [...] итә газета, — Сталин исеме менән [...] бәйләнгән. Бөйөк Ленин менән [...] Сталин еңеүле социалистик революция[...] ны һәм тыныслыҡ государствоһы [...] тороусы булды. Сталин был государство[...] ның тышҡы политикаһы юлын билдә[...] не, уның нигеҙе — халыҡтар араһын[...] тыныслыҡты нығытыу өсөн көрәш. Халыҡ-ара аренала эҙмә-эҙлекле үткәрелгән сталинсе тыныслыҡ политикаһы ар[...] һында социализм иле бөтә донъялағы [...] кешеләр араһында иҫ киткес ҙур авторитет ҡаҙанды.

Халыҡтар тыныслыҡтың беренсе халыҡ-ара Сталинсе премиялары бирелеүгә, [...] ныслыҡты яҡлаусыларҙың халыҡ-ара [...] миәтен күрһәтеүсе яңы дәлил итеп, Советтар Союзы тыныслыҡ политикаһы[...] яңы көүҙәләнеше итеп, ҙур шатлыҡ [...] нән ҡаршылайҙар.

Тыныслыҡтың халыҡ-ара Сталинсе пр[...] мияларын бирелеүҙе халыҡтар төрән рух [...] төренкелеге менән ҡаршылайҙар, сөнки был премиялар хәҙерге заманда иң [...] ритетле етәксе, тыныслыҡ байрағын [...] рөтеүсе И. В. Сталин исеме менән [...] ләнгән.

Тыныслыҡтың халыҡ-ара Сталинсе пр[...] миялары, тип яҙа газета, үҙ илдәр[...] ситтә лә яҡшы билдәле булған иң [...] некле ете деятелгә бирелде. Уларҙың [...] береһе үҙ тыуған иленең тоғро улы, [...] триоты, үҙ халҡының бәхете өсөн [...] шеүсе, тыныслыҡ өсөн актив көрә[...] булып тора. Тыныслыҡтың халыҡ-ара Сталинсе премия лауреаттары төрлө с[...] тик ҡараштағы, төрлө расалағы һәм [...] диндәге, төрлө илдәге һәм континент[...] кешеләрҙең вәкилдәре булып торалар. [...] кин улар бөтәһе лә — кешелек тар[...] белгән иң ҡеүәтле хәрәкәт-тыныслыҡты яҡлаусыларҙың бөтә донъя хәрәкәте [...] килдәре.

Ошо төп хәҡиҡәтте — Мәскәүҙең [...] ныслыҡ тураһында уйлауын, Мәскәүҙең тыныслыҡ өсөн көрәшеүен, Мәскәүҙең тыныслыҡ өсөн көрәшеүселәрҙе награ[...] лауын һис бер төрлө ялған ала шарпа[...] ла халыҡтарҙан йәшерә алмаҫ, тип [...] итә газета.

Польша общественносе, тип әйтелә [...] кәләнең ахырында, был премияларҙы [...] реүҙә беҙҙең бөйөк союзнигебеҙ һәм [...] сыбыҙ — Советтар Союзының тыныслыҡ политикаһы алып барыуын тағы ла [...] тапҡыр иҫбат итеүсе булыуын, тыныслыҡты һаҡлау һәм нығытыу өсөн көрәште көсәйтеүгә табан тағы ла бер аҙым [...] лыуын күреп, тыныслыҡтың халыҡ-ара Сталинсе премия лауреаттарын шатлы[...] менән ҡотлай.

Редактор F. F. ҒАФАРОВ.

Вак артелдәр берләштерелде

Балтач районында вак кустарсылыҡ артелдәре байтаҡ ҡына иҫәпләнә ине. Хәҙер был вак артелдәрҙең членлары берҙә_ ҡушылып, «Стахановец» промартеле ойошторҙолар. Был артелдең өҫ һәм аяҡ кейемдәре тегеү, мебелдәр эшләү цехтары киңәйтелде.

КАЛИННИКОВ МТС-ында БАЙ ТЕХНИКАНЫ ФАЙҘАЛАНЫУ ӨСӨН КӨРӘШ ЮҠ

Алдынғы МТС-тар һәм трактор бригадалары тракторҙар паркын тулы ҡеүәтендә файҙаланып, хеҙмәт етештереүсәнлеген көндән-көн күтәрә баралар. Ә Калинников МТС-ында бының киреһен күрергә тура килә. Бында бай техниканы сиктән тыш насар файҙаланалар һәм ошо һөҙөмтәлә трактор паркының хеҙмәт етештереүсәнлеге йылдан-йыл түбәнәйә бара. Мәҫәлән, 1948 йылда һәр бер 15 ат көслө тракторға 525 гектар, 1949 йылда — 445, ә 1950 йылда ни бары 438 гектар ер эшкәртелгән.

Бының сәбәбе нимәлә һуң? Машиналар иҫкергән тиер ине, һуңғы йылдарҙа ғына был МТС государствонан ике тиҫтәгә яҡын ҡеүәтле яңы тракторҙар алды. Яғыулыҡ һәм запас частәр ҙә етерлек. Бында был бай техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Шулай ҙа Калинников МТС-ы республика күләмендә ҡойроҡта һөйрәлеүҙә дауам итә, колхоздар менән төҙөгән договорҙарҙы йылдан-йыл үтәмәй килә һәм йыл һайын күп кенә ағыулыҡ артыҡ тотола.

Тракторҙар паркын былай насар файҙаланыуҙың төп сәбәбе, яҙғы сәсеүгә насар әҙерләнеүҙә, тракторҙар, тағылма инвентарҙарҙы түбән сифатлы итеп ремонтлауҙа һәм ҡыҙыу эш осоронда уларҙың теге йәки был сәбәп менән эшләмәй ултырыуҙарында. Механизаторҙар кадрҙарының составы ла яҡшы әҙерлекле кадрҙар иҫәбенә тулыландырылмай.

Быңа МТС-тың быйылғы әҙерлек эштәрен генә алайыҡ. Район колхоздары яҙғы баҫыу эштәренә бөгөн йәки иртәгә төшөргә торалар. Ә ошо көнгәсә МТМ-да 8 трактор, 50-ләп тағылма инвентарҙар ремонтта ултыра. Эш темпы түбән, хеҙмәт дисциплинаһы насар.

Тракторҙар һәм тағылма инвентарҙарҙы ремонтлау буйынса график формаль генә төҙөлгән, уны бөрәү ҙә һанға һуҡмай. Ул кварталдан-кварталға, биш көндән-көнгә үтәлмәй килә. Мәҫәлән, иптәш Решетников етәкселек иткән бригада 34-се номерле тракторҙы 25 ғинуарға тиклем уҡ ремонттан сығарырға тейеш ине, ләкин был машинаға әле булһа ремонт башланмаған.

Механизаторҙарға тейешле тормош шарттары тыуҙырылмаған. МТС директоры иптәш Перлов та, уның урынбаҫары иптәш Лобастов та был турала бер ниндәй ҙә хәстәрлек күрмәйҙәр. Культуралы ял итеү ойошторолмаған. Клуб булһа ла, унда радио юҡ, газеталар һәм журналдар алдырылмай. Ремонтсылар араһында социалистик ярыш ойошторолмаған һәм улар иҫке, бригадный метод менән эшләйҙәр. Трактористар Лидия Корабельникова, Иван Бунеев кеүек новаторҙарҙың эш методтары тураһында бик аҙ беләләр. Машина-трактор паркын тулыһынса файҙаланыу буйынса эске резервтарҙы иҫәпләп планлаштырмағандар.

Быйыл МТС эргәһендә ойошторолған курста 50 тракторист әҙерләп сығарыу планлаштырылғайны. Ләкин бында ни бары 36 ғына курсант уҡый. Был трактористар етешмәү сәбәпле быйыл да ҡыҙыу эш осоронда тракторҙарҙың эшһеҙ ултырасағын иҫкәртә. Ләкин был хәл МТС етәкселәрен һис борсомай, улар Ауыл хужалығы министерствоһының кадрҙар ебәреүен көтәләр.

Район Советы исполкомында Калинников МТС-ында уҙған йыл ошолай, яҙғы сәсеүгә ныҡлап әҙерләнмәү арҡаһында, тракторҙар паркының яртылаш ғына файҙаланылғанын һәм баҫыу эштәрен агротехник сроктарҙа башҡармау арҡаһында меңдәрсә центнер урожайҙың юғалтылыуын яҡшы беләләр. Ләкин МТС-тар менән етәкселек эшендә уҙған йылғы етешһеҙлектәрҙе һаман да ҡабатлайҙар, телефон аша күрһәтмә биреү менән генә сикләнәләр.

Калинников МТС-ын был эҙәклектән сығарыу өсөн ВКП(б)-ның район комитеты тарафынан һис кисекмәҫтән конкрет саралар күрелеүе талап ителә.

Х. Сафин,
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02432. Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тиражы 35.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға. 1951 йыл № 72 (8789) 13 апрель йома

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕНДӘ (1-се бит).
Г. Пухов. — Илде индустриализациялаштырыуҙың сталинсе программаһы (2—3-сө биттәр).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ғ. Галин. — Уҡытыу-тәрбиә һәм ғилми-тикшеренеү эштәренең сифатын күтәрергә (2-се бит).
Сәләх Ҡулибай.—Уңышлы талап (2-се бит).
СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. В. Ғирфанов. — Яҙғы бойҙай, һоло һәм арпа орлоҡтарын яровойлаштырыу (3-сө бит).
А. Сафонов. — Ағиҙел пароходствоһында техника насар файҙаланыла (3-сө бит).
Ҡадир Даян. — Халыҡ ейәр (3-сө бит).
Кәрам Бәкир. — Әсә һүҙе (3-сө бит).
Тимер Алюн. — Ҙур колхоздың иртәгеһе (4-се бит).
Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).
Корелағы ваҡиғалар (4-се бит).

Ҡалаларҙы, район үҙәктәрен төҙөкләндереү—бөтә общественностең мөһим эше

Партиябыҙҙың һәм Совет хөкүмәтенең ҙур хәстәрлеге менән илебеҙҙә торлаҡ, социаль-культура төҙөлөшө ҡеүәтле үҫә. Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре барлыҡҡа килә. Ошоноң менән бергә, партия һәм хөкүмәт хеҙмәтсәндәрҙең культура һәм коммуналь-тормош шарттарын яҡшыртыуҙың төп элементтарының береһе булған ҡалаларҙы, район үҙәктәрен, артабан төҙөкләндереүгә айырыуса ҙур иғтибар бирәләр.

Тик бер Башҡорт АССР-ы Коммуналь хужалыҡ министерствоһы буйынса ғына үткән йылда республикабыҙҙа коммуналь-торлаҡ төҙөлөшөнә, төҙөкләндереүгә һәм коммуналь предприятиеларҙы киңәйтеүгә 31 миллион һумдан артығыраҡ средство тотолдо.

Республикабыҙҙа коммуналь предприятиеларҙы артабан киңәйтеүҙә һәм уларҙың эшмәкәрлеген яҡшыртыуҙа байтаҡ эштәр башҡарылды. Водопровод селтәре яңынан бер нисә километрҙарға артты. Өфө, Белорет ҡалаларында общественный мунсаларҙы төҙөкләндереү эштәре үткәрелде. Өфө ҡалаһында яңы трамвай юлы һалыу, Дәүләкәндә электр станцияһы, Белорет ҡалаһында водопровод төҙөлөштәре дауам итте. Бәләбәй ҡалаһында электр станцияһы һәм механик водопровод төҙөлөштәре тамамланып, эксплуатацияға тапшырылдылар.

Үткән йылда Башҡортостандың ҡалаларында 21 километрҙан артығыраҡ яңы юл һалынды. Шул иҫәптән 151 мең квадрат метр оҙонлоғондағы юл асфальт менән ҡапланды. 11 километрҙан артығыраҡ оҙонлоҡтағы юлға ремонт үткәрелде.

Ҡалаларыбыҙҙы йәшелләндереүҙә 60 мең төп ағас, 233 мең төп ҡыуаҡ ултыртылды. Яҡтыртыу буйынса ла күп кенә саралар тормошҡа ашырылды. Тик бер Октябрьский ҡалаһында ғына урамдарға 592 фонарь ҡуйылыуын күрһәтеү ҙә етә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының ҡарары нигеҙендә республиканың башҡалаһы Өфөнө төҙөкләндереү буйынса ҙур ғына эштәр үткәрелде һәм үткәрелә.

Шулай ҙа ҡалаларҙы, бигерәк тә эшселәр посёлкаларын һәм район үҙәктәрен төҙөкләндереүҙә етешһеҙлектәр күп әле. Булған бай резервтар һәм мөмкинлектәр тулы файҙаланылмайҙар. Мәҫәлән, төҙөкләндереү эшенә таралған средстволарҙан 5 миллион һумдан күберәге расходланылмай ҡалды. Был, 7 километр ер асфальтланмауы йәки хеҙмәтсәндәргә 150 квартира бирелеп еткерелмәне, тигән һүҙ.

Капиталь төҙөлөш эштәре айырыуса һомшаҡ алып барыла. «Коммунстрой»—төҙөлөш-монтаж управлениеһының ғәйебе менән Өфөлә трамвай депоһы, трамвай юлдарын һәм водопровод төҙөлөш планын үтәү өҙөлдө. Был объекттарға билдәләнгән средстволарҙың 43 проценты файҙаланылмай ҡалды.

Ҙур төҙөлөш ойошмаларынан береһе булған «Баштрой» тресы (управляющий иптәш Конкин) коммунальниктарҙың торлаҡ йортон эксплуатацияға тапшырыу срогын инде өс тапҡыр өҙҙө. Сөнки башҡарылған эштәрҙең сифаты насар була. Шунлыҡтан государство комиссияһы ул йортто ҡабул итмәй. Стәрлетамаҡ ҡалаһында водопровод, Черниковск ҡалаһында канализация төҙөү темптары бик һүлпән алып барыла.

Төҙөкләндереү эшендә халыҡ ҡатнашыуы мөһим урын тота һәм ул ҙур резерв булып тора. Хеҙмәткә булдыҡлы һәр бер кеше төҙөкләндереүҙә йылына 5 көн эшләргә тейешлеге хаҡында урындағы Советтарҙың сессиялары тарафынан ҡабул ителгән ҡарарҙар ҙа бар. Ләкин күп кенә исполкомдарҙың тейешенсә иғтибар бирмәүҙәре арҡаһында был ҡарарҙар тормошҡа ашырылмайҙар. Өфө ҡалаһында хеҙмәткә булдыҡлы һәр бер кеше төҙөкләндереүҙә уртаса 1,5 кеше-көнө эшләһә, Бәләбәйҙә — 0,56, Белорет ҡалаһында — 0,40 кеше-көнө, Дәүләкәндә—0,42, Стәрлетамаҡ, Ишембай ҡалаларында — 0,15, Черниковск ҡалаһында — 0,26, Бөрөлә 0,09 кеше-көнө генә эшләнә.

Ҡалаларҙы төҙөкләндереү бурысын тик коммуналь хужалыҡ предприятиелары, урындағы Советтарҙың исполкомдары көсө менән генә тормошҡа ашырып булмай. Бында союзный һәм союз-республика буйһоноуындағы предприятиеларҙың да актив ҡатнашыуҙары кәрәк. Шулай ҙа Нефть промышленносы министерствоһының Октябрьский, Черниковск, Өфө ҡалаларындағы предприятиеларынан, Өфөләге электр промышленносы, Стәрлетамаҡ Белорет ҡалаларындағы бер нисә заводтан башҡалары был эштә ҡатнашмайҙар.

Ҡалған промышленность предприятиелары, бигерәк тә Өфө тау оборудованиелары заводы, 8-се март фабрикаһы, Стәрлетамаҡта Ленин исемендәге завод, Черниковскиҙә электр лампалары заводы, шырпы фабрикаһы һәм башҡалар ҡаланы төҙөкләндереүҙә ҡатнашмау ғына түгел, хатта үҙ завод һәм фабрика территорияларын да һәм уларға инеү юлдарын да юлып төҙөкләндермәйҙәр. Ә төҙөлөш ойошмалары бөтөнләй ситтә торалар.

Водопровод, канализация, электр яҡтылығы, төҙөкләндерелгән тротуарҙар, юлдар, парктар, баҡсалар, аллеялар — улар ҡулшылыҡ түгел, ә совет кешеләренең көндәлек талабы, культуралы тормошо, нормаль ялы, хеҙмәтсәндәрҙең юғары етештереүсәнлегенең береһе стимулы булып тора. Быны промышленность, төҙөлөш предприятиелары етәкселәренә аңларға ваҡыт инде.

1951 йылғы халыҡ хужалығы планы менән ҡалаларҙы, эшселәр посёлкаларын һәм район үҙәктәрен төҙөкләндереү эштәре күләме, үткән йылға ҡарағанда, байтаҡ арта. Өфө водопроводтарын артабан киңәйтеү, трамвай депоһы һәм Революционный, Аксаков урамдарында трамвай юлдары төҙөлөшөн йәйелдереү, Белорет ҡалаһында канализация төҙөлөшө, Стәрлетамаҡ һәм Белорет ҡалаларындағы водопровод, Стәрлетамаҡта мунса төҙөлөштәрен тамамлау һәм башҡа күп саралар билдәләнә.

Халыҡтың культура-тормош шарттарын артабан яҡшыртыу буйынса ҡала һәм райондарҙың совет, партия һәм профсоюз ойошмалары, предприятиелар һәм бөтә общественность алдында быйыл тағы ла ҙурыраҡ бурыстар тора.

Шулай ҙа беренсе кварталдың йомғағы урындағы исполкомдарҙың был мәсьәлә күберәк ултырыштар үткәреү менән генә сикләнгәнлектәрен күрһәтә. Төҙөлөш ойошмаларының эштәренә тейешенсә етәкселек һәм контроллек ителмәй. Шуның һөҙөмтәһендә билдәләнгән пландар үтәлмәй. Беренсе кварталда йыллыҡ планда ҡаралған средстволарҙың бары 5 проценты ғына файҙаланылған. Асылда бер генә объект та төҙөлә башланмаған әле. Әҙерлек эштәре һис ҡәнәғәтләнерлек түгел. Күп объекттар техник документациялар менән ошоға тикләм тәьмин ителмәгәндәр.

«Коммунстрой» кеүек төҙөлөш ойошмаларын етәкселәре үҙҙәренең ҡуҙғала алмаусанлыҡтары менән төҙөлөш эше планын үткән йыл өҙгөйнәләр һәм быйыл да план шундай өҙөлөү ҡурҡынысы аҫтында тора. Төҙөлөш ойошмаларына практик эшкә күсергә бик ваҡыт инде!

Ҡалаларҙы, район үҙәктәрен төҙөкләндереү буйынса билдәләнгән пландарҙы һүҙһеҙ һәм уңышлы итеп үтәүгә хәҙерҙән үк бөтә общественносте мобилизовать итеү урындағы Советтарҙың, партия һәм профсоюз ойошмаларының мөһим бурысы булып тора. Алға ҡуйылған бурысты уңышлы башҡарыу өсөн халыҡтың инициативаһын тулыраҡ файҙаланырға, бөтә заводтарҙы, промышленность предприятиеларын һәм ойошмаларҙы ылыҡтырырға, эске бай резервтарҙы тулы файҙаланырға кәрәк.

Ҡалаларыбыҙҙы һәм район үҙәктәрен төҙөкләндерелгән, юғары культуралы ҡалаларға һәм район үҙәктәренә әүерелдерәйек!

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советендә

Ошо көндәрҙә Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы республиканың Баймаҡ һәм Туймазы райондары колхоздарында яҙғы сәсеү алды һәм сәсеү эштәренең барышын тикшерҙе.

Министрҙәр Советы Баймаҡ һәм Туймазы райондарының колхоздары яҙғы сәсеүгә ҡәнәғәтләнмәслек әҙерләнделәр, тип билдәләне. Был райондарҙың айырым колхоздары яҙғы сәсеү алды һәм сәсеү эштәрен үткәреүгә ойошҡанлыҡ менән башламанылар һәм уны сиктән тыш түбән темптар менән алып баралар. Күп кенә колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙең эш пландары хәҙергә көнгә тиклем төҙөлмәгән, ә төҙөлгән пландарҙа орлоҡтарҙы таҙартыу, ағыулау, яровойлаштырыу һәм һауала йылытыу, орлоҡ участкаларында эшләү, баҫыуҙарға ашламалар сығарыу, баҫыуҙарҙы таҙартыу, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу, баҡсасылыҡ һәм йәшелсәлек буйынса эштәр, ағас ултыртыу һәм уларҙы тәрбиәләү, трактор бригадаларын хеҙмәтләндереү кеүек мөһим эштәр күҙҙә тотолмағандар.

Баймаҡ районы колхоздарында орлоҡтарҙы ағыулау буйынса эштәр асылда башланмаған да әле һәм картоф орлоҡтарын яровойлаштырыу башланмаған һәм бөртөклө ашлыҡ культураларын яровойлаштырыуға әҙерлек бөтөнләйгә алып барылмай. Туймазы районының колхоздарында ла ошондай уҡ хәл.

Был райондарҙың күп кенә колхоздары хәҙерге көнгә тиклем бөртөклө ашлыҡ, майлы, техник, мал аҙыҡтары культураларының орлоҡтары менән тәьмин ителмәгәндәр. Район Советтәре исполкомдары һәм уларҙың председателдәре Кувшинов һәм Сәлихьянов иптәштәр, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәре Вахитов һәм Садыков иптәштәр орлоҡтарҙы сәсеүгә әҙерләү эшенә тейешле иғтибар бирмәйҙәр. Һөҙөмтәлә Баймаҡ районында бөртөклө ашлыҡ культуралары орлоҡтарының 50 проценттан артығырағы һәм Туймазы районында майлы, техник культураларҙың һәм күп йыллыҡ үләндәрҙең бөтә һалынған орлоҡтары таҙартылмаған һәм сәсеү кондицияһына еткерелмәгән.

Баймаҡ район Советы исполкомы яман орлоҡтарҙы сортлы орлоҡтарға алмаштырыу эшенә яуапһыҙ ҡарай. Орлоҡтарҙы алмаштырыу планы колхоздарға бик һуңлап һәм 7 мең центнерға кәметелеп еткерелгән, һөҙөмтәлә бер генә колхоз да орлоҡтарҙы алмаштырыуға башламаған.

Баймаҡ һәм Туймазы район Советтәренең исполкомдары тупраҡта дым туплау һәм уны һаҡлау эштәренә йомшаҡ етәкселек итәләр. Был райондарҙың колхоздарында туңға һөрөлгән ерҙәрҙе иртә яҙғы тырматыуға һуңлап башланылар һәм эш темптарын көсәйтеү саралары күрелмәй. Тырматыу менән бер үк ваҡытта, күп кенә колхоздарҙа, тулы мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан, яҙғы һөрөү тейешенсә йәйелдерелмәгән.

Ужымдарҙы һәм күп йыллыҡ үләндәрҙе өҫтәмә аҙыҡландырыу, шулай уҡ болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм яҡшыртыу эштәре сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәслек алып барыла. Колхоздарҙа булған урындағы һәм минераль ашламалар өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн насар файҙаланылалар. Сибай МТС-ы усадьбаһына килтерелгән минераль ашламаларҙы колхоздар үҙҙәренә ташымайҙар. Был райондарҙың колхоздары ағас ултыртыу эштәренә насар әҙерләнгәндәр һәм ағас ултыртыуға әле булһа башламағандар, һөҙөмтәлә бындай эштәрҙе үткәреүҙең иң яҡшы сроктары юғалтыла.

Район Советтәре исполкомдарының, район ауыл хужалығы бүлектәренең етәкселәре, Баймаҡ, Сибай, Туймазы, Бишенде МТС-тарының директорҙары, Баймаҡ һәм Туймазы райондарының күп кенә ауыл Советтәре һәм колхоздары етәкселәре тупраҡтың өлгөрөүенә бөтә урындарҙа ла көндәлек контроль урынлаштырмағандар. Һөҙөмтәлә айырым колхоздарҙа дым ҡаплау, туңға һөрөлгән ерҙәрҙе сәсеүгә әҙерләү һәм ерҙәрҙе яң һөрөү буйынса эштәр башҡарылмай, ә айырым участкалар кибәләр.

Был райондарҙың колхоздарында юғарыла әйтелгән ҙур етешһеҙлектәргә юл ҡуйылыуы ошо район Советтәре исполкомдарының председателдәре Кувшинов һәм Сәлихьянов иптәштәрҙең колхоздарға өҫтән генә етәкселек итеүҙәренән, эштең асылына инмәүҙәренән һәм район ауыл хужалығы бүлектәренең һәм МТС-тарҙың эшенә йомшаҡ контроллек итеүҙәренән килә.

Килеп тыуған хәлде төҙәтеү маҡсаттарында Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы, Баймаҡ һәм Туймазы район Советтәре исполкомдарының председателдәре Кувшинов һәм Сәлихьянов иптәштәрҙе, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәре Вахитов һәм Садыков иптәштәрҙе, Баймаҡ, Сибай, Туймазы, Бишенде МТС-тарының директорҙары Ҡадиров, Вегункин, Юнусов һәм Рыбаков иптәштәрҙе яҙғы сәсеү алды һәм сәсеү эштәрен үткәреүҙәге ҙур етешһеҙлектәрҙе һис кисекмәҫтән бөтөрөүҙе, тупраҡ өлгөрөүенең барышына систематик контроль урынлаштырыуҙы, тупраҡтың тотош майҙандарҙа өлгөрөүен көтөп тормайынса, тракторҙар менән булһын, шулай уҡ йәнле тартыу көсө менән һайлап алыу тәртибендә баҫыу эштәрен йәйелдереүҙе талап итте һәм уларҙы түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итте:

бөтә колхоздарҙа ла тупраҡта дымды ҡаплау буйынса һис кисекмәҫтән эш ойоштороорға, быңың өсөн бөтә тракторҙарҙы һәм колхоздарҙың йәнле тартыу көстәрен файҙаланырға һәм тупраҡтың кибеүенә юл ҡуймаҫҡа;

колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙең эш пландарындағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә, бөтә баҫыу эштәрен үҙ ваҡытында үткәреүҙе иҫәпкә алырға һәм яҙғы сәсеүҙе йыйнаҡ һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн колхоздарҙың һәм машина-трактор станцияларының бөтә тартыу һәм эш көстәрен тулыһынса файҙаланырға;

һәр бер колхозды бөртөклө ашлыҡ, бөртөклө-ҡуҙаҡлы, майлы, техник, мал аҙығы, йәшелсә культуралары, картоф һәм күп йыллыҡ үлән орлоҡтары менән тәьмин итеүгә кисектергеһеҙ саралар күрергә һәм 1951 йылда бөтә культуралар буйынса ла сәсеүҙең государство планын һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итергә;

баҫыу эштәренең беренсе көндәренән үк эшләп сығарыуҙың смена нормаларын һәр бер тракторсының, колхозсының үтәүенә даими контроль урынлаштырырға. Һәр көн эш йомғаҡтарын трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларында тикшерергә һәм бөтә тракторсыларҙың да эшләп сығарыуҙың смена нормаларын һәм колхозсыларҙың эшләп сығарыу буйынса раҫланған нормаларын үтәүҙәре өсөн кәрәкле саралар күрергә;

баҫыу эштәренең сифатына көндәлек контроль булдырырға, брак яһау факттарына юл ҡуймаҫҡа һәм брак яһауға ғәйепле булыусыларҙы ҡаты яуапҡа тартырырға;

һәр бер культураны иң яҡшы агротехник срокта сәсеүҙе тәьмин итергә, бойҙай һәм башҡа ҡиммәтле аҙыҡ, техник һәм майлы культураларҙың үҙ ваҡытында сәселеүенә айырыуса иғтибар бирергә;

үтәлгән баҫыу эштәренең баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының бригадирҙәре тарафынан көн һайын, ә колхоз председателдәре һәм МТС директорҙары тарафынан 5 көн һайын мотлаҡ ҡабул ителеүен тәьмин итергә;

бөтә колхоздарҙа ла орлоҡтарҙы таҙартыу эшен яҡындағы өс көн эсендә тамамларға, орлоҡтарҙы һауала йылытыу буйынса киң эштәр үткәрергә, таҙалығы һәм сығышы ағыуҙан кондицияһыҙ орлоҡтарҙы сәсеүгә юл ҡуймаҫҡа, һәр бер колхоз буйынса билдәләнгән сәсеү нормаларының һаҡланылыуына ныҡлы контроль булдырырға. Кондицияһыҙ орлоҡтарҙы кондициялы орлоҡтарға алмаштырыу планын үтәү өсөн һис кисекмәҫтән саралар күрергә һәм яман орлоҡтарҙы сортлы орлоҡтарға алмаштырыу планының үтәлеүен тәьмин итергә;

бөтә колхоздарҙа ла орлоҡтарҙы ҡоро юл менән ағыулау эштәрен ойоштороорға, ағыулау өсөн ағыу химикаттарын Сельхозснаб складтарынан ташып алыуҙы тамамларға һәм һәр бер колхоз буйынса орлоҡтарҙы ағыулау планының үтәлеүен тәьмин итергә;

картофты яровойлаштырыуға һис кисекмәҫтән тотонорға, һәр бер колхозды бөртөклө ашлыҡ культураларын яровойлаштырыуға тулыһынса әҙерләү өсөн кисектергеһеҙ саралар күрергә, һәр бер колхозды кәрәк һанда термометрҙар менән һәм яровойлаштырыуҙа эшләрлек кадрҙар менән тәьмин итергә, яровойлаштырыу планын һис һүҙһеҙ үтәргә һәм орлоҡтарҙы ағыулау һәм яровойлаштырыу сифатына тейешле контроль булдырырға;

ужым культураларын һәм күп йыллыҡ үләндәрҙе урындағы һәм минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы киң ойоштороорға, һәр бер колхоздың государство тарафынан раҫланған планды тулыһынса үтәүен генә түгел, бәлки байтаҡ арттырып үтәүен дә тәьмин итергә;

урман полосалары ултыртыуҙы, бөтә колхоздарҙа ла болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу эштәрен һис кисекмәҫтән ойоштороорға;

тупраҡты эшкәртеү һәм ауыл хужалығы культураларын сәсеү эштәрендә алдынғы агротехниканы киң файҙаланырға — предплужниклы һабандар менән һөрөү, сәсеүҙең арҡыры-буй, тар рәтле, квадрат-оялап сәсеү ысулдарын бөтә колхоздарҙа киң ҡулланырға;

ике сменала эшләү һәм һәр бер тракторсының смена нормаларын үтәүе юлы менән тракторҙарҙың юғары етештереүсәнле эшләүен тәьмин итергә, трактор бригадаларын прицепщиктар, һыу һәм ағыулыҡ ташыусылар менән комплектовать итергә, тракторсыларға нормаль культура-тормош шарттары тыуҙырырға;

колхоздар, трактор һәм баҫыусылыҡ бригадалары араһында социалистик ярышты киң йәйелдерергә, бөтә тракторсыларҙы һәм колхозсыларҙы яҙғы сәсеүҙе йыйнаҡ һәм юғары сифатлы итеп үткәреүгә мобилизовать итергә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы, район Советтәре исполкомдары председателдәре Кувшинов һәм Сәлихьянов иптәштәргә яҙғы сәсеүҙе юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн уларҙың персональ рәүештә яуаплы булыуҙары тураһында иҫкәртеү яһаны.

Сәсеү алды һәм сәсеү эштәрен бындай ҡәнәғәтләнмәслек алып барыу факттарының республиканың башҡа ҡайһы бер райондарында ла булыуын иҫәпкә алып, Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы бөтә район Советтәре исполкомдарынан, район ауыл хужалығы бүлектәренән, машина-трактор станцияларынан һәм уларҙың етәкселәренән үҙҙәренә тейешле һығымталар яһауҙы һәм яҙғы баҫыу эштәрен йәйелдереүҙә һәм үткәреүҙә булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн кисектергеһеҙ саралар күреүҙе талап итте.

Баҫыу эштәре көндәлеге

Баҫыу эштәре көндән-көн киңәйә бара

Йомағужа. (Телефон аша). Райондың колхоздарында баҫыу эштәре көндән-көн киңәйә бара. «Ағиҙел» колхозында 104 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды, 446 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо. Дым һаҡлау маҡсаты менән 328 гектар ер тырматылды.

«Ҡыҙыл юл», «Красный украинец», Салауат исемендәге һәм башҡа ауыл хужалығы артелдәрендә лә юғары урожай үҫтереү саралары күрелә.

Салауат исемендәге колхозда Подгорный МТС-ының тракторҙары менән 40 гектар ер һөрөлдө. Ер һөрөү шулай уҡ «Политотдел», «Ағиҙел» һәм башҡа колхоздарҙа ла башланды.

Хәҙер районда 4800 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды, 3500 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо, 1100 гектар ер тырматылды.

Орлоҡтарҙы сәсеүгә әҙерләүгә колхоздар серьез иғтибар бирәләр. Чкалов исемендәге колхозда 1000 центнерҙан артығыраҡ орлоҡ ағыуландырылды. Сәсеү материалдарын яровизациялауға әҙерлек бара. Колхоздарҙа 30 яровизация пункты ойошторолдо.

М. Мөхәмәдиев,
(үҙ хәбәрсебеҙ).

* * *

Күгәрсен районы колхоздары юғары урожай алыу өсөн, яҙғы агротехник сараларҙы киң ҡулланалар. Һуңғы 2-3 көндә райондың колхоздары 2000 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотоу һәм 250 гектарҙан артығыраҡ майҙанда ужым һәм үлән сәсеүлектәренә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрҙеләр.

«Красный Октябрь» ауыл хужалығы артеле члендәре 70 гектар майҙанда ҡар һыуы тоттолар. Хәҙер ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландыра башланылар. Шулай уҡ «Дружба», Ленин, Димитров, Свердлов, Буденный, Тельман исемендәге, «Брасный нива» һәм башҡа күп кенә колхоздарҙа ҡар һыуҙарын тотоу һәм ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу айырыуса уңышлы бара.

Х. Дәүләтшин.

* * *

Әбйәлил районы колхоздары ҡара пар һәм туңға һөрөлгән бөтә майҙандарҙы тырматыу эшен тамамланылар. Шулай уҡ 1,5 мең гектар майҙанда ер һөрөлдө. Әлмөхәмәт һәм Әбйәлил МТС-тарының бөтә тракторҙары баҫыу эштәрендә ҡатнашалар.

Әбйәлил МТС-ының иптәш Бармин етәкселек иткән трактор бригадаһының тракторсылары «Путь к коммунизму» колхозында 450 гектар ер һөрҙөләр. Тракторсылар смена нормаларын арттырып үтәйҙәр. Улар «С—80» тракторы менән сменаға 20—22 гектар ер һөрәләр. Был колхозда шулай уҡ 1,5 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ағастары ултыртылды. **С. Петухов.**

* * *

Шишмә. Район колхоздары сәсеү алды эштәрен уңышлы үткәрәләр. Киров исемендәге колхозда 50 гектар урынына 70 гектар ужым аҙыҡландырылды. «Алға» һәм Ленин исемендәге колхоздар ҙа планды арттырып үтәнеләр.

«Удрәк» совхозында 250 гектар арыш һәм 56 гектар көҙгө бойҙай ужымы минераль ашламалар менән аҙыҡландырылды. Район буйынса бөтәһе 870 гектар ужым аҙыҡландырылды. Хәҙер тотош майҙанда ужымдар йәшәрә. Баҫыуҙарҙа өлгөргән ерҙәрҙе һайлап тырматыу башланды. «Туҫарак» колхозында 37 гектар майҙанда тырматыу үткәрҙеләр. Андреев исемендәге колхоз районда беренсе булып өлгөргән ергә һөрә башланы.

Ә. Әхтәмов.

Өфө киҙе-мамыҡ комбинаты коллективы май алды социалистик ярышына ҡушылып, үҙенең һан һәм сифат күрһәткестәрен артабан яҡшыртыу өсөн көрәшә. **Һүрәттә:** уңда — сырлау цехының инструкторы иптәш З. Фролова, сырлаусы Н. Ғәниева һәм Т. Тимерғазина иптәштәргә эш алымын камиллаштерергә өйрәтә. Һулда—комбинаттың еп иләү фабрикаһының комсомолец-йәштәрҙән торған отличный сифат бригадаһы бригадиры М. Вәлиәхмәтова һәм цех мастеры ярҙамсыһы Т. Грачева иптәштәр етештерелгән ярым фабрикаттың сифатын тикшерәләр.

А. Червинский һәм Л. Якубов фотолары.

ТӨҘӨҮСЕЛӘР ЯРЫШЫ

Черниковск төҙөлөш тресында 1 Май байрамы хөрмәтенә социалистик ярыш йәйелдерелде. Конторалар, прораб участкалары, бригадалар коллективы һәм айырым эшселәр үҙ өҫтәренә күтәренке йөкләмәләр алып, бөйөк байрамды производство еңеүҙәре менән ҡаршыларға әҙерләнәләр.

Алтынсы номерлы торлаҡтар төҙөү контораһының өсөнсө участкаһы коллективы март айы планын 116 процентҡа үтәне. Хәҙер ул Черниковск ҡалаһының Сталин урамында ҙур төҙөлөш эштәрен йәйелдерҙе. Дүрт-биш ҡатлы торлаҡ йорттарын төҙөү ҡыҙыу темп менән бара. 6 мең квадрат метрҙан артығыраҡ торлаҡ майҙанын эсенә алған был йорттар июнь һәм июль айҙарында эксплуатацияға тапшырылырға тейештәр.

Участкала ер ҡаҙыу, йөк күтәреү эштәре тулыһынса механизациялаштырылған. Шулай уҡ күп хеҙмәт талап итә торған штукатура һәм маляр эштәренең дә 70 — 80 проценты механизм көстәрен ҡулланыу менән үтәләсәк.

Стахановсы бригадалар үҙ йөкләмәләрен үтәүҙә ташсы-новатор Личенко һәм штукатурсы Сычев иптәштәрҙең алдынғы эш методтарын ҡулланалар.

Столяр Евсеев, балта оҫтаһы Якупов, ташсы Столяров һәм башҡа иптәштәрҙең бригадалары смена нормаларын 180—200 процентҡа үтәйҙәр.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Укытыу-тәрбиә һәм ғилми-тикшеренеү эштәренең сифатын күтәрергә

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы Башкорт государство педагогия институтында укытыу һәм фәнни эштәрҙең торошон тикшереп, унда бик ҙур етешһеҙлектәргә һәм эҙәклектәргә юл куйылыуын асыл. Институт укытыусылар кадры әҙерләүҙең халык хужалығы планын йылдан-йылға үтәмәй килә. Тик һуңғы биш йыл эсендә генә ул республикабыҙға бер мең бер йөҙҙән артык укытыусы биреп етермәне. Уҙған укыу йылында институт укытыусылар әҙерләп сығарыу планын тик 68 процентка ғына үтәгән. Физика, математика, туған тел, рус теле һәм әҙәбиәте укытыусыларын әҙерләү планын үтәү тағы ла насарырак тора.

Институт партия ойошмаһының 9 апрелдә булып үткән йыйылышында ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһының карары тураһында ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш **Сәетбатталов** доклад менән сығыш яһаны. Ул үҙенең сығышында институттың эшендә бығаса урын алып килгән һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы тарафынан асылған бик ҙур етешһеҙлектәр һәм ул етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса билдәләнгән саралар тураһында институт коммунистарына һөйләп бирҙе.

— Институт дирекцияһының һәм партия ойошмаһының, — тине иптәш Сәетбатталов, — студенттар кабул итеү эшенә иғтибарһыҙ карауҙары, алдан тейешле әҙерлек алып бармауҙары аркаһында, институтка, уҙ алдына укытыусы булыу теләген куймаған, осраклы кешеләр килеп инә. Быны дөрөҫләү өсөн, әле 1950-1951 укыу йылына студенттар кабул иткәндә, башка институттарға инеү экзаменын бирә алмаған кешеләрҙең укыу йылы башланғандан һуң педагогия институтына килеп инеүҙәрен күрһәтеү ҙә етә.

Башкорт педагогия институты республикабыҙҙағы мәктәптәргә, бигерәк тә башкорт мәктәптәренә юғары квалификациялы укытыусылар кадры әҙерләй торған иң ҙур укыу йорто булып тора. Шуға карамаҫтан, институт етәкселәре был мөһим бурысты үтәүгә иғтибарһыҙ мөнәсәбәттә булыуҙарын дауам итерәләр. Физика, математика, сит ил телдәре факультеттарында башкорт студенттарының һаны дөйөм һандың 8 процентын ғына тәшкил итеүен институт дирекцияһының был эшкә яуаплыһыҙ карашы булыуы менән генә аңлатырға мөмкин.

Институттың укытыусылары составында ғилми исем алған кешеләр бары 23 процент кенә тәшкил итә, уларҙың да береһе генә лә профессор йәки фән докторы түгел. Күп кенә укытыусыларҙың юғары укыу йорттарында эшләү тәжрибәләре юк.

Институт директоры иптәш Вәлиев ғилми исем алған укытыусылар һанының 1947 йылдан алып әле күпкә тиклем 16 кешегә, укытыусыларҙың һәм студенттарҙың дөйөм һанының ике тапкырға артыуы менән маһайып, хуш күңеллелеккә бирелгән. Ул укытыусылар кадрын өйрәнеү һәм һайлап алыу менән кәнәғәтләнерлек шөғөлләнмәй, институтты юғары квалификациялы специалистар менән тәьмин итеү, башкорттарҙан ғилми кадрҙар әҙерләү буйынса хәл иткес саралар күрмәй. Иптәш Вәлиев преподавателдар һайлап алыуҙа юғары укыу йортонда эшләргә һәләтле булмаған кешеләрҙе үрләтеп, дөрөҫ булмаған, принципһеҙ юлға баҫкан. Институттың аспирантураһына ғилми эшкә лә һәләтле булмаған, перспективаһыҙ, осраклы кайһы бер кешеләрҙең үтеп инеүенә юл куйылған.

Институтта ғилми-тикшеренеү һәм укытыусыларҙың квалификацияларын күтәреү эштәре бик йомшак куйылған. 1950 йылға план менән билдәләнгән ғилми-тикшеренеү эшенең күбеһе үтәлмәгән. Һуңғы биш йыл эсендә институт ғилми хеҙмәттәрҙең бер генә йыйынтығын да сығармаған.

Кандидатлык минимумы тапшырыу планы бары 15 процентка ғына үтәлгән. 1950 йылда бер генә укытыусы ла диссертация якламаған. Укытыусыларҙың марксистик-ленинсе укыуҙарында сериоз етешһеҙлектәр бар. Күп кенә укытыусылар был өлкәлә, тик формаль ғына, уҙ алдарына өйрәнеүселәр булып иҫәпләнәләр. Партия ойошмаһы укытыусыларҙы идея-политик тәрбиәләү эше менән етерлек шөғөлләнмәгән, коммунистарҙың уҙ алдарына укыуҙарына контроллек итмәгән.

Күп кенә укытыусыларҙың марксистик-ленинсе теорияға эйә булыу өҫтөндә эшләмәүҙәре аркаһында, тарих, башкорт теле һәм әҙәбиәте, рус һәм сит ил әҙәбиәте, политэкономия, педагогика һәм башка кафедралар буйынса кайһы бер лекциялар һәм семинар занятиелары түбән идея-политик кимәлдә үткәрелделәр, ябайлаштырыуға, объективизмға, методик хаталарға юл куйыла.

Башкорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенең эше айырыуса кәнәғәтләнмәҫлек хәлдә. Бында раҫланған программа юк. Укытыусыларҙың календарь-тематик эш пландарында баш-баштаклык урын алған. Студенттар өсөн дәреслектәр һәм укыу китаптары юк. Студенттар башкорт теле һәм әҙәбиәте буйынса тәрән һәм нықлы белем ала алмайҙар.

Институт Советы кафедраларҙа һәм факультеттарҙағы укытыу-методик, ғилми-тикшеренеү һәм политик-тәрбиә эштәренең ыңғай тәжрибәләрен тәрән өйрәнеү һәм дөйөмләштереү менән тейешенсә шөғөлләнмәй. Институт Советының ултырыштарында большевистик тәнкит һәм үҙ-үҙеңде тәнкитләү, ижади дискуссия йәйелдерелмәгән.

Институттың штаттағы күп кенә укытыусылары, кафедра мөдирҙәре һәм декандары үҙ эштәренә зарар килтереп, төрлө урында өҫтәмә эш алып баралар. Ә институттың етәкселеге быға килешеп карай.

Институт эшендәге бөтә был етешһеҙлектәр укытыу-тәрбиә эштәренең сифатын түбәнәйтеүгә килтергән. Институтты тамамлап сығыусыларҙың байтағы педагогик эшкә йомшак әҙерләнгән булалар, укыусылар менән лаборатория, экскурсия һәм илде өйрәнеү эштәрен ойоштора белмәйҙәр, кластан тыш һәм мәктәптән тыш эштәрҙе ойоштороуға кәрәкле күнекмәләре юк, комсомол һәм пионер ойошмалары эшенең йөкмәткеһен белмәйҙәр. Был етешһеҙлектәр студенттарҙың педагогик практикаларына етәкселек итеүгә, йыш кына, осраклы, методислек эшенә ярамһыҙ кешеләрҙе ылыктырыуҙан килә.

Институт уны тамамлап сыккан элекке студенттар менән бәйләнеш тотмай, улар аша педагогия кадрҙары тәрбиәләүҙәге йомшак яктарҙы өйрәнмәй. Массовый мәктәптәрҙең һәм иң яҡшы укытыусыларҙың эш тәжрибәләре бик йомшак өйрәнелә.

Институттың партия ойошмаһы укытыу-тәрбиә һәм ғилми-тикшеренеү эштәрендәге был сериоз етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә тейешле ныкышмалык күрһәтмәгән һәм етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн, бөтә звеноларҙа ла эштең сифатын күтәреү өсөн коллективты тейешенсә мобилизовать итмәгән.

Партия һәм хөкүмәтебеҙҙең укытыусылар кадры әҙерләү тураһында даими хәстәрлек күреүҙәре аркаһында Башкорт педагогия институтының укыусылар һәм укытыусылар составы һуңғы йылдарҙа ике тапкырға артты. Институттың укытыусылары коллективының күпселеге, бигерәк тә уның партиялы өлөшө, педагогтар әҙерләү буйынса партия тарафынан куйылған бурысты үтәүгә намыҫ менән караусы, һәләтле кешеләр. Институт дирекцияһының һәм партия ойошмаһының бурысы, — тине иптәш Сәетбатталов үҙенең сығышын тамамлап, — коллективтың бөтә көсөн оло күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, ВКП(б)-ның Өлкә Комитеты бюроһы карарын тормошка ашырыу өсөн көрәшкә мобилизовать итеүҙән тора.

Доклад буйынса фекер алышыуҙар коммунистарҙың ҙур активлеге менән үтте. Сығыш яһаусылар институттың укытыу-тәрбиә эштәрендәге етешһеҙлектәрҙең килеп сығыуының сәбәптәрен астылар һәм уны бөтөрөү юлдарын күрһәттеләр.

— Институтыбыҙҙың эшендә, — тине беренсе булып сығыш яһаусы, укытыусы иптәш **Емасов**, — бик сериоз етешһеҙлектәр бар. Ләкин директор иптәш Вәлиев был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә коллективты мобилизовать итмәй. Дирекция үҙенең һәм юғары ойошмалар приказдарының һәм карарҙарының үтәлешен тикшермәй. Беҙҙең коллективтың эшендә көсәргәнешлелек юк, ойошканлык етешмәй. Кафедра мөдирҙәре лекцияларҙа булмайҙар. Эштең торошо менән танышып бармайҙар. Етешһеҙлектәрҙе күрмәскә тырышалар. Эшебеҙҙәге был етешһеҙлектәр тәнкиттең етерлек йәйелдерелмәүенән, партия ойошмаһы секретары иптәш Масловтың дирекция эшенә партия ойошмаһының контролен үткәреү буйынса йомшак эшләүенән килә.

Беҙҙең тарих факультетында, — тине укытыусы иптәш **Сушовский**, — бик сериоз етешһеҙлектәр бар. Иптәш Шипсель Урта Азияны яулап алыу темаһына лекция һөйләгәндә мюридселекте милли азатлык хәрәкәте, прогрессив хәрәкәт итеп күрһәтергә тырыша. Ә кафедра мөдире иптәш Ниғмәтуллин был лекцияға «тулыһынса кәнәғәтләнерлек» тигән баһаны бирә. Был хәл быйылғы укыу йылында, мюридселек хәрәкәтенең реакцион эҫәлеге ВКП(б) Үҙәк Комитеты органы «Большевик» журналының 1950 йылда сыккан 13 номерында иптәш М. Багировтың мәкәләһендә тулыһынса фаш ителгәндән һуң була. Был факт институттың кайһы бер укытыусыларының үҙ белем кимәлдәрен тулыландыра барыу өҫтөндә етерлек эшләмәүҙәрен күрһәтә.

Марксизм-ленинизм нигеҙҙәре кафедраһы мөдире иптәш **Мазленников** үҙенең сығышында дирекцияның етәкселек итеү эшендәге етешһеҙлектәренә тукталды.

— Институт директоры иптәш Вәлиев, — тине ул, — яраҡһыҙ стиль менән етәкселек итә. Яңы эшкә лә, яманына ла тығылмау яғында тора. Миҫалға башкорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһын алырға мөмкин. Был кафедра инде 7 — 8 йылдан бирле насар эшләй. Уның мөдире иптәш Закиров башкорт телен артабан камиллаштыра, үҫтерә барыу өҫтөндә ныкышмалы эш ойоштороу урынына, иғтибарһыҙлык күрһәтеп, үҙе был эшкә тоткарлык яһай. Иптәш Сталиндең тел ғилеме тураһындағы хеҙмәттәре сыккандан һуң да кафедра үҙенең эшен төҙәтмәй.

Институтка аспиранттар һайлап алыуҙа ла кадрҙар әҙерләү эшен яҡшыртыу принцибе йыш кына боҙола. Быны дөрөҫләү өсөн, иптәш Кадиров институтта эшләгән вакытта, уның катынын — Кадированы, һис бер перспективаһыҙ, укырға һәләтле булмаған кешене аспирант итеп алып, ике йыл буйына стипендия биреүҙе күрһәтеү ҙә етһә кәрәк. Ә был берҙән-бер генә факт түгел.

Иптәш **Чанышев** үҙенең сығышында укыусылар кабул итеү менән дирекцияның шыклап шөғөлләнмәүен, рус теле кафедраһындағы етешһеҙлектәрҙе тәнкитләне.

Партия ойошмаһы секретары иптәш **Маслов** ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһының карары бик вакытлы булыуын, институт эшендәге етешһеҙлектәрҙе бик урынлы асыуын һәм был карарҙың артабан институттың эшен яҡшыртыуҙа ярҙам итәсәген әйтте.

— Директор иптәш Вәлиевтең, — тине ул һүҙен дауам итеп, — институтка етәкселек итеүҙә билдәле бер принципиаль юлы булмауы, коллективты укытыу-тәрбиә һәм ғилми-тикшеренеү эштәрен яҡшыртыу өсөн көрәштә мобилизовать итеүҙә ҙур кыйынлыктар тыуҙыра.

Укытыусы иптәш **Семенова** үҙенең сығышында бер генә лә әҙмә-әҙләкле, принципиаль фекер әйтә алманы. Уның тәүге һүҙҙәренә һуңғы фекерҙәре каршы килде һәм, дөйөм алғанда, уның сығышында дирекция алдында ярамһыҙланыуға тырышыу күренде.

Йыйылышта катнашыусылар иптәш Захаровтың үҙенең хаталарын таныр һәм асык бер фекер әйтер тип көткәйнеләр. Ләкин улай булып сыкманы. Иптәш Захаров, үҙенең лекцияһында юл куйған хатаһын, төрлө юлдар менән акларға ынтылды.

Иптәш **Вәлиев** үҙенең сығышында ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы карарының бик урынлы һәм дөрөҫ булыуын, институттың эшен артабан яҡшыртыуҙа һис шикһеҙ ҙур ярҙам итәсәген әйтте. Һәм унан һуң коллективты ойошкан, берҙәм эшләргә саҡырҙы.

Партия ойошмаһының дөйөм йыйылышы ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы карарын тормошка ашырыу өсөн практик саралар билдәләгән карар кабул итте.

F. Ғалин.

Урынлы талап

Салауат районы үҙәген культуралы төҫкә индереү тураһында күп һүҙ булды. Үҙ заманында матур ғына пландар ҙа төҙөлдә, ләкин бында ул мәсьәлә әлегә тиклем һуңғы нәүбәттәге бурыстар дәрәжәһенә төшөрөп калдырылған.

Күҙгә бәрелеп торған фактарға күсәйек, һүҙҙе культура йорто, кинонан башларға мөмкин.

Бына беҙ район үҙәгендә «Культура йорто» тип йөрөтөлгән бер бинаға инәбеҙ. Баҫкан һайын иҙән такталары бәгелеп-һығылып торған һәм туктауһыҙ ел уйнап торған был бинала Островскийҙың пьесаһы буйынса эшләнгән «Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр» картинаһы буласак. Билеттәр һатылғансы, клубка халык йыйылғансы, һәм механиктар аппарат тирәһендә булашкансы ике сәғәт самаһы вакыт үтте һәм ахырҙа һыҙғырыуҙар, аяк дөпелдәтеүҙәр картинаның башланыуын көтәүен тиҙләтәләр. Һәм фильм башланды, ләкин көтмәгәндә картинаның икенсе өлөшөнән һуң тауыш паровоз гудогына окшай, персонаждарҙың йөҙө карикатураға әйләнеп китә. Механиктар аппаратты көйләй алмай, тамашасыларҙың картинаның дауам итеүен көтеп, «әле яйға һалыныр» тигән өмөттәре менән тәүгә сәғәт бер була. Ләкин аппараттың яйға һалыныуына ышаныс юк, зал буш кала, халык тарала.

Быға ғәжәпләнеп: кино һәр вакыт шулай күрһәтеләме? — тип һорағас: эйе, һәр вакыт шулай, механик икенсе эшкә күсте, былары әле йәш, аппарат иҫкергән, район етәкселәре кинога йөрөмәйҙәр, энергия етешмәй, тигән яуапты ишетәбеҙ.

Нәүбәттәге афишала «Салауат Юлаев» картинаһы. Уның халык азатлығы өсөн көрәшен, батырлығын күрәсәкбеҙ, Шанлы Салауаты менән ғорурланасакбыҙ. Ләкин был өмөт картинаның башында ук юкка сыға. Был юлы ла аппараттың ниңдәйҙер детале ватыла. Аппаратты һүтеү, тағы төҙәтеү һәм тағы һүтеү, кыҫкаһы, капиталь ремонт эшә башлана. Механик һәм уның ярҙамсыһы, мәктәп йәшендәге, хатта мәктәпкәсә йәштәге, бала-сага аппарат тирәһенә ябырылалар. Ә был мәлдә экранда бары тик куян һүрәттәре, йоҙрок силуэттары ғына үтеп тора. Һәм зал тағы ла буш кала.

Бындай хәлдәрҙән һуң нәүбәттәге афишаға карап, кеше кул һелтәй. «Ул картинаның нисек күрһәтеләсәген беләбеҙ инде», — ти. Һәм ысынлап та Малаяҙа халык бындай хеҙмәтләндереүҙән туйған инде.

* * *

Бынан бер йыл элек КОГИЗ район үҙәгендә китап магазины «аскан», «Магазин» район Советы башкарма комитеты бинаһының мейесһеҙ бер мөйөшөндә, китап складын общественный нужник урынлаштырылған. Кышкы шарттарҙа был һалкын мөйөштә һәм мунса ла китапты нисек массаға еткерергә, таратырға кәрәк икенсе булыуын күҙ алдына килтереүе кыйын түгел. Ә халыктың китапка мөхәббәте ҙур. Магазин көн һайын тиҫтәләрсә, йөҙҙәрсә китап һата. Китап магазины мөдире иптәш Ғәтләмовага кыш көнө һалкын, йәй көнө ямғыр бәләһенә лә кисерергә, китаптарҙы үҙ соланында һакларға ла, солан кыйығынан һыу үтә башлағас, уларҙы өйөнә индереп торорға ла тура килгән. Ул районның етәкселәренә лә бер нисә тапкыр ярҙам һорап барған, үҙенең эш шарты хакында КОГИЗ директоры иптәш Мурашовка ла яҙған, хатта был хәлде культура-агартыу эштәре начальнигы иптәш Нәжиповтың үҙенә лә һөйләгән. Ләкин улар конкрет ярҙам урынына «ысын күңелдән» вәғәҙә генә биргәндәр. Китап магазины әле лә һалынмаған. Хәҙер КОГИЗ менән район ойошмалары араһында бәхәс башланған инде. Район етәкселәре фекеренсә, китап магазинын КОГИЗ һалырға тейеш, ә КОГИЗ етәкселәре: юк, район үҙ бинаһына һалырға тейеш, тиҙәр.

Китап «магазиненән» һуң район библиотекаһы менән дә танышырға мөмкин. Библиотекала 9 меңдән артығырак китап иҫәпләнә. Бында рус һәм донъя әҙәбиәте классиктарының һәм совет яҙыусыларының әҫәрҙәре бар. Китап укыусыларҙың һаны һаман арта бара һәм библиотеканың кеше һаны әҙәлмәй. Ләкин библиотеканың да хәле китап «магазиненән» бары йылы мөйөштә урынлашыуы менән генә айырыла. Библиотеканың бер яғы торак бүлмә, ул яғы катын-кыҙҙар консультацияһы бүлмәһе. Әлбиттә, был хәл вакытлы, тиҙҙән культура йорто һалынып бөтәсәк, библиотека, парткабинет, культура-агартыу бүлеге лә, киноустановка ла, клуб та, үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәктәре лә шунда урынлашасак.

Район үҙәгендәге үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәге составында театр училищела укыған йәки район театрында бер нисә йыл эшләгән кешеләр бар. Был түңәрәк 1948 йылда республика смотрында һәм Бөтә Союз үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәктәре смотрында катнашкан. Был түңәрәк тә уның эшенә етерлек иғтибар булмау сәбәпле үҙенең эшен йомшартҡан.

Район үҙәгендә бына ошондай хәл. Унда йәшәүсе халык етешһеҙлектәрҙе ашығыс төҙәтелеүе тураһында талап куялар һәм ул талап бик урынлы.

Солех Кулибай.

„Кызыл Башкортостан" материалдары буйынса

„Салауатта сәсеүгә әҙерлеккә етәкселек итмәйҙәр"

Ошондай исем менән «Кызыл Башкортостан» газетаһының 51-се номерында Салауат районының колхоздарында яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәренең сиктән тыш насар барыуы тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айканлы ВКП(б)-ның Салауат район комитеты редакцияға түбәндәгеса яуап бирҙе:

«Салауатта сәсеүгә әҙерлеккә етәкселек итмәйҙәр» тигән хәбәрҙә күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә карата күп кенә практик саралар күрелде. Сәсеүгә әҙерлек мәсьәләһе буйынса колхоздарҙың, ауыл Советы исполкомы председателдәренең һәм төп партия ойошмалары секретарҙарының ауыл хужалығы белгестәре менән берлектә кәңәшмәһе үткәрелде. Сәсеүгә әҙерлек һәм уны үткәреү эшендә практик ярҙам күрһәтеү өсөн колхоздарға күп кенә ауыл хужалығы специалистары һәм партия, совет активы ебәрелде.

Илде индустриализациялаштырыуҙың сталинсе программаһы

(И. В. Сталиндең „Советтәр Союзының хужалык хәле һәм партия политикаһы тураһында"ғы сығышының 25 йыллығына карата)

Бынан егерме биш йыл элек, 1926 йылдың 13 апрелендә, иптәш Сталин партияның Ленинград ойошмаһы активы йыйылышында «Советтәр Союзының хужалык хәле һәм партияның политикаһы тураһында» тигән доклад менән сығыш яһағайны. Иптәш Сталиндең докладь ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1926 йыл 6 — 9 апрелдәргә булған пленумына бағышланғайны. Үҙәк Комитеттең был пленумы ВКП(б)-ның XIV съезынан һуң — илдең хужалык яғынан үҙ аллылығын тәьмин итергә, уның оборона һәләтлелеген нығытырға һәм илебеҙҙә социализмдең еңеүе өсөн кәрәкле шарттар булдырырға тейеш булған социалистик индустрияалаштырыу үткәреүҙе партияның төп бурысы итеп раҫлаған съезынан һуң ук әле ай үткәс йыйылғайны.

«Советтәр Союзының хужалык хәле һәм партия политикаһы тураһында» тигән докладында иптәш Сталин ВКП(б) Үҙәк Комитеты пленумының эшенә йомғак яһаны, партияның илде индустриализациялаштырыу курсын һәр яклап нигеҙләне, уны тормошка ашырыуҙың юлдарын һәм методтарын билдәләне. Иптәш Сталиндең был тарихи сығышы большевиктар партияһын, илебеҙҙең хеҙмәтсәндәрен социализмдең еңеүе өсөн көрәшкә тупланы, ижади марксизм-ленинизм хазинаһына бик киммәтле өлөш булып инде.

* * *

Ленинград ойошмаһы активы алдында иптәш Сталиндең доклад менән сығыш яһау моментына большевиктар партияһы, Ленин тарафынан иғлан ителгән яңы экономик политиканы тайпылышһыҙ рәүештә тормошка ашыра барып, халык хужалығын нигеҙҙә аякка баҫтырыуға ирешкәйне инде, илде тарихи этапка — социалистик индустрияалаштырыу этабына килтереп еткергәйне инде.

Иптәш Сталин үҙенең докладында, коммунистар партияһының һәм Совет власының ул осорҙағы эске политикаһының асылына характеристика биргәндә, былай тине:

«Беҙҙең политикабыҙҙы билдәләүсе төп факт шунан тора, беҙҙең илебеҙ үҙенең хужалык үҫешендә НЭП-тың яңы осорона, яңы экономик политиканың яңы осорона, туранан-тура индустрияалаштырыу осорона инде» (Әҫәрҙәр, 8 том, 117-се бит).

НЭП-тың беренсе осоронда (1921 — 1925 йылдар) халык хужалығын үҫтереү эше, тотошо менән алғанда, ауыл хужалығына килеп терәлә ине, уны аякка баҫтырмай тороп, индустриялаштырыуҙы үҫтереү өсөн кәрәк булған сырье, аҙык-түлек ресурстарын булдырыу мөмкин түгел ине. НЭП-тың икенсе осоронда иһә халык хужалығын үҫтереү эше инде, тотошо менән алғанда, туранан-тура индустриялаштырыуҙы йәйелдереүгә, совет промышленносын үҫтереү темптарын тиҙләтеү кәрәклегенә килеп терәлә ине.

В. И. Ленин үҙенең бик күп әҫәрҙәрендә, эре промышленность кенә социализмдең берҙән-бер материаль базаһы була ала, беҙгә нык үҫкән ауыр промышленность кәрәк, сөнки унан башка беҙҙең илебеҙ капиталистик камау эсендә үҙенең үҙ аллылығын һаклап кала алмай, тип күрһәтеп килде. Социализм, капитализм булдырғанға карағанда, тағы ла юғарырак техника булдырырға тейеш, ғөмүмән промышленносте, айырым алғанда, ауыр промышленносте максималь рәүештә үҫтереүҙе тәьмин итеү партияның һәм СССР эшселәр синыфының бик мөһим бурысы булып тора, тип өйрәтте Ленин. Илебеҙҙә социализм төҙөү эшендә, уның оборона кеүәтен нығытыуҙа һәм уның бойондороҡһоҙлоғон һаклауҙа ауыр индустрияның әһәмиәте тураһындағы ленинсе идеяларҙы үҫтереп, иптәш Сталин СССР-ҙы социалистик нигеҙҙә индустриялаштырыуҙың төҙәк бер теорияһын барлыкка килтерҙе.

Социалистик индустриялаштырыуҙың төп бурыстары иҫке фабрикаларҙы һәм заводтарҙы яңы техника нигеҙендә кайтанан йыһазландырыуҙан, индустрияның батша Россияһында булмаған күп кенә тармактарын яңынан төҙөүҙән; яңы оборона промышленносе ойоштороуҙан тора ине, трактор промышленносе һәм хәҙерге заман ауыл хужалығы машиналары промышленносе кәрәк ине.

Иптәш Сталин ВКП(б)-ның XIV съезында яһаған тарихи докладында СССР-ҙы социалистик нигеҙҙә индустриялаштырыуҙың планын генераль рәүештә билдәләне. Иптәш Сталин 1925 йылдың декабрендә партия съезы трибунаһынан: «Илебеҙҙе аграр илдән индустриаль илгә, кәрәкле йыһазды үҙ көсөбөҙ менән етештереүгә һәләтле илгә әүерелдереү,— беҙҙең генераль линиябыҙҙың асылы бына шулай», — тине.

Партияның был генераль установкаһын нигеҙләп һәм үҫтереп, иптәш Сталин 1926 йылдың 13 апрелендә Ленинград ойошмаһы партия активы йыйылышында яһаған докладында, промышленносте һәр яклап үҫтереү — индустриялаштырыу түгел әле ул, тип күрһәтте. «Индустриялаштырыуҙың үҙәге, уның нигеҙе, — тине ул,—эре промышленносте (яғыулык, металл һ. б. ш.) үҫтереүҙән, аҙак килеп, етештереү средстволарын етештереүҙе үҫтереүҙән, үҙебеҙҙең машиналар эшләүебеҙҙе үҫтереүҙән тора» (Әҫәрҙәр, 8 том, 120-се бит).

Был сталинсе акыллы күрһәтмәләрҙә индустриялаштырыуҙың яңы, совет методының нигеҙҙәре бирелде, унан ары был метод иптәш Сталиндең бынан һуңғы әҫәрҙәрендә һәм бигерәк тә уның 1946 йылдың 9 февралендә һайлаусылар алдында һөйләгән тарихи телмәрендә артабан үҫтерелде.

Индустриялаштырыуҙың совет методы капиталистик индустриялаштырыу методынан тамырынан ук айырыла.

Экономика үҫеше стихиялы рәүештә барған капиталистик илдәрҙә индустриялаштырыу ғәҙәттә еңел промышленносте үҫтереүҙән башлана һәм оҙак вакыт үткәндән һуң ғына ауыр промышленносте үҫтереү өсөн нәүбәт етә. Бындай индустриялаштырыу методы беҙҙең илебеҙ өсөн ярамай, сөнки беҙҙең илебеҙ үҙенең быуаттар буйына килгән техник-экономик артталығын планлы рәүештә, тарихи кыҫка сроктарҙа бөтөрергә, үҙенең хужалык яғынан үҙ аллылығын тәьмин итергә һәм донъя капитализмы тағылмаһына әүерелдереүҙән үҙен һаклап алып калырға тейеш ине.

«Капиталистик камау эсендә тороусы пролетариат диктатураһы иле, — тине иптәш Сталин, — әгәр ҙә ул үҙ өйөндә етештереү коралдары һәм средстволары етештермәй икән, әгәр ҙә ул халык хужалығын капиталистик нигеҙҙә алға киткән, етештереү коралдары һәм средстволары етештереүсе илдәргә бәйле рәүештә тоторға тура килә торған үҫеш баҫкысында тороп кала икән, ул хужалык яғынан үҙ аллы була алмай. Был баҫкыста тороп калыу — үҙеңде донъя капитализмына биреү тигән һүҙ» (Әҫәрҙәр, 8 том, 121-се бит).

Совет государствоһы үҙенең хужалык яғынан үҙ аллылығын юғалтманы, ул кеүәтле социалистик, индустриаль-колхоз державаһына әүерелде, сөнки иптәш Сталин тарафынан эшләнгән социалистик индустриялаштырыу программаһын совет халкы коммунистар партияһы етәкселегендә тайпылышһыҙ рәүештә тормошка ашырып килде.

СССР-ҙа социалистик төҙөлеш шарттары, эшселәр синыфының хеҙмәт энтузиазмы индустриялаштырыуҙың кәрәкле юғары темптарын тормошка ашырыуҙы мөмкин иттеләр.

Троцкийселәр, зиновьевселәр, бухаринселәр һәм ленинизмдең башка кәбәхәт дошмандары үҙҙәренең партияға каршы һәр төрлө махинациялары менән ерәнгес бер максатты — эре индустрия төҙөү эшенә тоткарлык яһау, илебеҙгә индустриялаштырыуҙың капиталистик методын көсләп тағыу һәм илебеҙҙе ошоноң менән капиталистик системаның экономик тағылмаһына әүерелдереү максатын күҙәттеләр. Иптәш Сталиндең бик ҙур хеҙмәте шунан тора: ул капитализмде кире кайтарырға маташыусыларҙың бысрак уйҙарын үҙ вакытында белде һәм фашланы һәм Тыуған илебеҙҙе социалистик индустриялаштырыуҙың еңеүле юлына килтереп сығарыуҙы, ә социалистик индустриялаштырыу бөтә халык хужалығына техник яктан реконструкция яһауҙы һәм илебеҙҙең оборона кеүәтен нығытыуҙы тәьмин итте.

* * *

Иптәш Сталин үҙенең «Советтәр Союзының хужалык хәле һәм партияның политикаһы тураһындағы» докладында социалистик туплаңма сығанактары һәм илебеҙҙе индустриялаштырыу өсөн уларҙы дөрөҫ файҙаланыу менән бәйләнешле мәсьәләләргә ҙур иғтибар бирҙе.

Капиталистик илдәрҙә индустриялаштырыу колонияларҙы талау иҫәбенә, контрибуция иҫәбенә, кабалалы заемдар иҫәбенә үткәрелеп килде. Туплаңманың бөтә был сығанактары яңы тип государство булған Совет государствоһының тәбиғәте һәм характеры менән бергә һыйыша алмай.

«Индустриялаштырыуҙың [illegible] юлы, — тине иптәш Сталин, — промышленность эше өсөн үҙ һаклыктарыбыҙ юлы, социалистик туплаңма юлы; иптәш Ленин был юлдың илебеҙҙе индустриялаштырыу өсөн берҙән-бер юл икәнен күп тапкырҙар күрһәтеп килде» (Әҫәрҙәр, 8 том, 124-се бит).

Иптәш Сталин илебеҙҙә социалистик туплаңманың төп сығанактары ниҙә тороуын күрһәтте. Был эске туплаңмаларҙың тәбиғәте бөтәһенән элек, етештереү коралдары һәм средстволарына хосуси милектең бөтөрөлөүе менән һәм уларҙы общественный милек итеү, совет экономикаһының планлы характеры менән, хеҙмәтсәндәрҙең производствола социалистик мөнәсәбәте менән билдәләнә. Социалистик туплаңманың мөһим сығанактары: национализациялаштырылған промышленностан һәм банк системаһынан *килә торған, тышкы сауҙа монополияһынан, эске сауҙаны үҫтереүҙән килә торған* табыштар, Совет государствоһының килемдәре, шулай ук эске заемдар булды.

Иптәш Сталин, социалистик туплаңма өсөн мөмкинлектәр булыуы менән большевиктарҙың тынысланырға хокуктары юк, улар был мөмкинлектәрҙе ысынбарлыкка әйләндерергә тейештәр, тип айырыуса ныклап әйтте. Иптәш Сталин быны нисек эшләргә мөмкин һәм кәрәк икәнлеген күрһәтте. Бының өсөн, беренсенән, илдәге туплаңманың артыуының һөҙөмтәһен дә промышленность кәрәктәренә ебәрә барыу; икенсенән, туплаңманың частный капитал кеҫәһенә аға торған каналдарҙы ябыу (ул вакытта туплаңманың бер өлөшө частный капитал кеҫәһенә аға ине); өсөнсөнән, промышленностең һәр бер тармағында, иҫәпһеҙ-һыйһаҙы аякка баҫтырыу һәм промышленносте артабан үҫтереү өсөн кәрәкле запастар туплай барыу; дүртенсенән, һәр төрлө көтөлмәгән хәлдәрҙән һакланыу өсөн, государство кулында кәрәкле резервтар булдыра барыу.

Туплаңмаларҙы дөрөҫ файҙаланыу һәм экономия режимы мәсьәләләренә иптәш Сталин бигерәк тә ҙур иғтибар бир-

...ҘЕЛ ПАРОХОДСТВОҺЫНДА ТЕХНИКА НАСАР ФАЙҘАЛАНЫЛА

Быға пароходствоһының тех-... [illegible] йылдан-йыл яҡшыра ... [illegible] ... средстволары алды. Шулай ... составы ла яҡшыра. [illegible] ... ремонтлау заводы стаха-... Петров үткән йылда ... [illegible] ... әсендә уҡ 12 йыллыҡ ... Котельщиктар Волков һәм ... токарҙар Закиров һәм Федоро-... [illegible]

[illegible] ... «Салават Юлаев» ... [illegible] ... планын 143,9 процентҡа үтә-... [illegible] ... һәм стахановсы-... [illegible]

[illegible] ... Коротков булған ... [illegible] ... 72 ... [illegible]

... Мантов етәкселегендәге «Игар-... [illegible] ... 45 тәүлек ... [illegible]

[illegible] ... ял йылдарҙа государство пландын үтәү ... [illegible] ... аварий факттар ғына ла әйтеү етә.

Капитаны иптәш Жигулев булған «Фурманов» пароходы. [illegible] ... Иптәш Жигулев, йылғаның пароход йөрөй алырлыҡ үҫәк урындарын насар белгәнлектән, тағы шунда үткәрергә була. Капитан Жигулев, һыу тиҙлеге ҙә, йылғаның пароход йөрөй алырлыҡ үҫгәлектәрен дә тикшермәйенсә, һалды юр ситендә китергә. Эшпаҙаһын бер өлөшө уның ... [illegible] ... 20 мең һум зыян күрелде.

«Рыбалка» пароходының аварияһы ... [illegible] ... 5 пароход һәм баржа 5 көн буйына аварияла булған урында эшләне.

Үткән йылда пароходство 17 яңы теплоход алды. [illegible] ... Ләкин пароходство етәкселәре уларҙы ... [illegible] ... тәүлек буйы үтмыуға мәжбүр булдылар. Уларҙың механизмдәре йыш ватыла ... [illegible] ... флоты 1951 йылда тағы ла ҡуйылыу астында ...

Пароходствола шулай уҡ суднолар ремонтлау предприятиеләрен станок-тар паркын файҙаланыу ҙа яҡшыһын түгел. [illegible] ... ремонтлау ... тип регулировать итергә һәм эшләтә башларға ғына кәрәк. Ләкин ул эшләтелмәй.

Заводта оборудованиеларҙы насар фай-ҙаланыуҙың төп сәбәбе булып, цехта эштәр насар планлаштырылыуы тора. [illegible] ... деталдәр менән тәьмин ителмәй.

Ағиҙел йылғасылары һәм инженер-техник работниктәре оборудованиеларҙы тулыһынса файҙаланыуҙы тамырынан яҡшыртырға бурыслылар.

А. Сафонов.

Совет сауҙаһы яҡшы ойошторолған

[illegible] ... районының Йыланлы сельпоһы ... [illegible] ... 1950 йылдың IV квартала ... [illegible] ... 105 процент ... [illegible]

[illegible] ... промышленность тауарҙары ... кул-түлек әйберҙәре һатыу магазин-ларҙа һәм яҡты. Һатыусылар пот-... менән культуралы мөнәсәбәт ...

... транспорт менән тәьмин ител-... Шуның һөҙөмтәһендә магазиндарҙа ... етерлек күләмдә бөтә төр-... һәм ассортименттағы тауарҙар килтерелә.

20 йыл буйына сельпо председателе булып эшләүсе иптәш Камалов сауҙа эшен ... [illegible]

Хәҙер Йыланлы сельпоһы яҙғы сәсеү осоронда колхоздарҙы һәм колхозсыларҙы өлгөлө хеҙмәтләнлереү өсөн әҙерләнә. Ауыл хужалығы инвентарҙәре, сбруйҙар, ҡамыт-ыңғырсаҡтар, әйәрҙәр, майлау материалдары, сәй, шәкәр, аҡ он һәм башҡа төрлө культура тауарҙары сельпоның бөтә магазиндарында ла һатыла.

В. Кондров.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Яҙғы бойҙай, һоло һәм арпа орлоктарын яровойлаштырыу

Беҙҙең Башҡортостандың ... [illegible] ... алан һәм урман-алан райондарында бөр-төкле культураһар ... [illegible] ... урожай алыуҙы ... [illegible]

[illegible] ... Т. Д. Лысенко ... [illegible]

[illegible]

на, термометрҙар, мискә, силәк, кәрәк, ҡул тырмалары, өлгәргес, лейкалар, һе-перткеләр әҙерләп ҡуйырға кәрәк.

Яровойлаштырыу эшен махсус бил-дәләнгән, алдан инструктаж үткән кеше генә үткәрә ала. Бындай яровизаторҙар яровойлаштырылаһы орлоктоң 1 — 2 центнер орлоғон алып алдан һынау яро-визацияһы үткәрә. Был уның күп орлоҡ массаһын дөрөҫ итеп яровойлаштырыуы өсөн кәрәк. Һынау яровизацияһыса алынған орлоҡ, һуңынан, киптерелә һәм ил көнә дөйөм орлоҡҡа ҡушып сәселә.

Яровойлаштыра башлау срокътары. Академик Лысенко, яровойлаштырып сә-сеүҙән файҙалы һөҙөмтә алыу өсөн орлоҡтарҙы еүешләү срогын дөрөҫ билдәләү һәм еүеш орлоҡ өйөмөндәге температура-ны дөрөҫ тота белеү иң мөһим шарттар, тип күрһәтә.

Яҙғы ҡаты бойҙай, һоло һәм арпа ор-лоҡтарын еүешләй башлауға баҫыу эш-тәрен башлап ебәреүгә (тупға һөрөлгән ерҙе тырмата башлауға) 3 — 5 көн ҡал-ғас ҡына тотонорға кәрәк. Иртә өлгөреү-се ҡаты бойҙай һәм йомшаҡ бойҙай ор-лоҡтарын еүешләүгә тырмата башлауҙан 1 — 3 көн алда ғына тотонорға кәрәк.

Беренсе төркөм орлоҡтар 10 — 14 көндә, икенсе төркөм орлоҡтар 5 — 7 көндә яровойланып өлгөрәләр. Әгәр ҙә улар, был срокты үтеп киткән хәлдә, сә-селһәләр, улар әрәм һирәк шытып сы-ғырға һәм шытымдары зәғиф булырға мөмкин.

Яровойлаштырыу эшенә иртә тотоноу бик зарарлы ул. Беҙҙә яҙғы көндәр тиҙ үҙгәреп тороусан. Был хәлдәрҙә еүешлән-гән орлоҡтар 5 — 7 йәки 10 — 14 көн урынына 15 — 20 көн буйына сәселмәй ятһа, бындай орлоҡтарҙың бо-ҙолоуы һәм һирәк шытымдар биреү ҡур-ҡынысы бар. Бигерәк тә алда иртә ки-леүсән яҙҙарҙа яровойлаштырыу срогын һайлау менән һаҡ булырға кәрәк.

Сәсеү эштәре башланғансы яровойла-шыу процесен үтеп бөтмәҫкә мөмкин. Был ваҡыт беренсе 1 — 2 көндә яровойлаш-тырылмаған орлоҡтар менән сәсергә һәм ҡалған көндәрҙә, яровойланыу процесе (срогы) үтеп етмәгәндә лә, яровойлашты-рылған орлоҡтар менән сәсергә кәрәк. Был ваҡиғаларҙа орлоҡтар яровойлаҫыу стадияһын тупраҡтың үҙендә үтеп өлгө-рәрҙәр.

Беҙҙең шарттарҙа яҙғы бойҙайҙан «лю-тесценс-62», «мильтури», ерле ҡыҙыл башаҡ бойҙай, «гордеиформе—10», «ме-ляинус—69» һәм бөтә төр урындағы бой-ҙайҙарҙы, «победа», «Московский», «со-ветский» исемендәге һәм урындағы һо-лоларҙы. Һуңлап өлгөрәүсе арпа сортта-рын яровойлаштырырға мөмкин.

Бина һәм инвентарь. Һайланған бина яҡшы елләтелерлек булыу төп талап бу-лып тора. Бының өсөн тирә яғы асыҡ, өҫтө ябыҡ һарайҙар яҡшы була. Күп ор-лоҡ яровойлаштырылмағанда абзар келәт-тәрҙә лә файҙаланырға мөмкин. Бинаның иҙәне һыу үткәрерлек булырға тейеш тү-гел. Бер квадрат майҙанда 50 килограмм орлоҡ яровойлаштырып була. Инвентар-ҙарҙан 3 — 5 абай термометр, 2 — 3 мискә йәки сапсаҡ, 1 — 2 лейка, 2 — 3 ағас көрәк, 2 — 3 ағас ҡул тырмалары, 3 — 4 тимер силәктәр һәм бер өлгәргес кәрәк.

Орлоҡтарҙы ағыулау. Яровойлаштырыу өсөн бик таҙа, юғары шытымлы орлоҡ-тар ғына алырға кәрәк. Яровойлаштырыу өсөн алынған бойҙай орлоҡтары 1 цент-нер орлоҡҡа 100 — 150 грамм иҫәбенән АБ препараты менән яровойлаштыра башлауҙан алда ағыуландырыла. Башҡа төр ағыуҙар менән ағыулау ярамай. Һоло һәм арпа орлоҡтары формалин менән, орлоҡтарҙы икенсе тапҡыр еүешләгән саҡта ағыуландырылалар. Икенсе тапҡыр еүешләү өсөн алынған һыуҙың һәр бер 10 литрына 32 кубик сантиметр форма-лин ҡушыла. Формалин таҙа булырға те-йеш. Бойҙай орлоҡтарын да ошо уҡ тәр-типтә формалин менән (АБ препараты урынына) ағыуларға мөмкин.

Формалин менән яровойлаштырылған орлоҡ 2 — 3 сәғәт ваҡытҡа брезент йә-ки торпоша менән ҡаплана, һуңынан өҫ-тә асылып 20 — 25 сантиметр ҡалын-лығында таратыла һәм ныҡлап болғап торола.

Орлоҡтарҙы еүешләү. Орлоҡтарҙы еүешләү өсөн һуңлап өлгөрәүсе ҡаты бойҙайҙар өсөн һәр бер 100 килограмм орлоҡҡа 33 килограмм, иртә өлгөрәүсе ҡаты. һәм йомшаҡ байҙайҙар өсөн 31 ки-лограмм, һоло һәм арпа өсөн 35 кило-грамм һыу алына. 2 — 3 тонна орлоҡ иҙәнгә һалына. Беренсе тапҡыр еүешләү өсөн тейешле һыуҙың өсөнсө өлөшө алы-на. Еүешләнгән орлоҡ 25 — 30 санти-метр ... [illegible] ... ләндерг... [illegible] ... икенсе ... [illegible]

Яровойлаштырыу. ... [illegible]

Һуңл... [illegible] ... еүешләнеүҙән һуң, уларҙың 3 — 5 про-центтән дә күп булмаған өлөшө шыта башлауына өлгәшергә кәрәк. Орлоҡтар шыта башлағас та, өйөмдәге температура тәүлек буйынса 10 — 12 градус йылы-лыҡтан 2 — 5 градусҡа тиклем (елләтеү, әйләндергеләү юлдары аша) түбән төшөрөлә.

Һоло һәм арпа орлоҡтары һуңғы тап-ҡыр еүешләндерелеүҙән һуң, 10 — 12 градус йылылыҡта 15 — 20 сәғәт бу-йына тотола. Бынан һуң, 3 процент ор-лоҡтары бөрөнләп өлгәрәүен көтеп тор-май, өйөмдәге температура 2 — 5 гра-дусҡа тиклем түбән төшөрөлә. Быға өйөмдә йоҡартып өйөү, бинаны елләтеү, өйөмдә әйләндергеләп тороу юлы аша ел-гәшелә.

Бойҙай, һоло һәм арпа орлоҡтарының өйөм эсендәге 2 — 3 градус темпера-тураһы 10 — 14 көн буйына тотола. Шунан да йылы температура булдырыу ярамай. Ошо температурала 10 — 14 көн тотолған һуңлап өлгөрәүсе ҡаты бойҙай, һоло һәм арпа орлоҡтарын ба-ҫыуға сығарып сәсергә мөмкин. Ләкин ер сәсеүгә өлгөргән булһа, яровизация срогы (10 — 14 көн) үтеп етмәгән бул-һа, орлоҡтарҙы сығарып сәсеү менән һуңлау ярамай.

Йомшаҡ бойҙайҙар түбәндәгеса яро-войлаштырылалар: өсөнсө тапҡыр еүеш-ләндерелгәс, орлоҡ өйөмөнөң эсендәге температура 10 градусҡа тиклем түбән төшөрөлә һәм ошо йылылыҡта 5 — 7 көн тотола. Был ваҡыт эсендә темпера-тураның 15 градустан юғары күтәрел-мәүен, 8 градустан түбән төшмәүен бик ныҡ күҙәтергә кәрәк. Иң яҡшы темпера-тура 10 — 12 градус булып. 5 — 7 көндән һуң, орлоҡтар баҫыуға сығарып сәселәләр.

Яровойлаштырылған орлоҡтарҙы сы-ғарып сәсеү һуңлаһа (көндәр боҙолоп ки-теү арҡаһында), уларҙы күгәреп боҙо-лоуҙан һаҡлау өсөн орлоҡ өйөмөн тара-тып төшәрергә, бинаны бик ныҡ елләтеп торорға, орлоҡто йыш әйләндергеләп то-рорға кәрәк. Бынан тыш, уларҙы өлгәр-гестәр аша ла үткәрергә мөмкин.

Яровойлаштырылған орлоҡтоң үлсәүе арта. Ләкин яровойлаштырылған орлоҡ-тарҙы ла ябай орлоҡтарҙың бөртөгө һа-нындағы норма менән сәсергә кәрәк. Бер гектарға ябай орлоҡ 5 миллион бөртөк итеп сәселә икән, яровойлаштырылған ор-лоҡтар ҙа 5 миллион бөртөк итеп сәсе-лергә тейеш.

Агроном В. Гирфанов.

Кадир Даян

ХАҠЛЫҠ ЕҢЕР

Трумэн пираттары, диңгеҙ кисеп,
Ябырылдылар Корея иленә;
Самолеттар, үлем уты һибеп,
Күтәрелде уның күгенә.
Ерҙә, күктә ҡанлы ауыр дәһшәт,
Аҫҡый ҡан һәм дары еҫтәре.
Дары төтөндәре диңгеҙ үтеп,
Ыҫлай Аҡ йорт тыштын, эстәрен.
Бөтә нәмә яна, аҡтарыла,
Ут эсендә көрәп күмере.
Тынғы бирмәҫ һатлыҡ пираттарға
Кореяның утлы күмере.
Ҡорал тотоп, диңгеҙ аръяғынан
Килдәр килгән Корея еренә,
Унда Уолл-Стриттең йыртҡыс йөҙө,
Ҡанлы Трумэн ҡулы күренә.
Тенге бурҙар йортто талаһа ла,
Хужа булып унда ҡала алмай.
Ҡанлы эҙҙән иҙә ҡыуған саҡта,
Ҡасыр урын эҙләп таба алмай.
Һәм тыныслыҡ һайлап халҡ ышана;
Хаҡлыҡ еңер, хаҡлыҡ юғалмаҫ.
Ялған «ирк статуяһы» унда
Палачтарҙы ҡаплап тора алмаҫ.

Карам Бакир

ӘСӘ ҺҮҘЕ

Йыйырсыҡтар төштө биттәремә,
Көмөшләнде ҡара сәстәрем,
Тәнем менән инде бик ҡартайҙым,
Ә йөрәгем һаман йәш әле.
Стенала торған рәсеменә,
Йәҙгегә ҡарап туйғансы,
Мин ҡарт әсә йөрәк серҙәремде
Һеҙгә һөйләйем, бөйөк юлбашсы.
Бәркәт кеүек ике батыр улым
Ҡорбан булды һуғыш ҡырында,
Күҙҙәремдең ҡайнар йәше киптө
Уйлай-уйлай улар турында.
Белем, ул йылдарҙа ауырлыҡты,
Дәһи, һеҙ күберәк күрҙегеҙ,
Ләкин халҡ еңеүгә юл күрһәтеп,
Аҡылдарға өмөт бирҙегеҙ.
О, ҡәҙерле, мәрхәмәтле кеше,
Иң аҡыллы, һеҙгә әйтәшәм,
Тормошомдоң иң ҙур таянысы,
Тағы һеҙҙең менән һөйләшәм.
Бөгөн океан арты банкирҙары
Иҫәп тота кинйә улыма,
Һәм уйлайҙар быҙау кейҙерергә
Эшкә күнгән алат ҡулыма.
Иштермәйем һис тә тауышымды,
Бөтә донъя халҡы ишетһен,
Һәр бер йөрәк мине әрнеүемде
Үҙ әрнеүе итеп хис итһен.
Хәс дошмандар күпме уҡталһа ла
Мәхрүм итә алмаҫ улымдан,
Хеҙмәт аша тапҡан бәхетемде
Тартып ала алмаҫтар ҡулымдан.
Утҡа ташлай алмаҫ трумэндар
Аҡ сәскәләй ҡартлыҡ көнөмдә,
Һәм ышанам, дәһи, һеҙ бар саҡта
Тыныс булырына илемдең.

Ауыл хәбәрселәренең куст кәңәшмәләре

Учалы районы «Сталин байрағы» һәм «Зауралец» газеталарының редакциялары ауыл хәбәрселәренең һәм стена газеталары редакторҙарының куст кәңәшмәләрен үткәрҙе. Унда 100-ҙән артыҡ кеше ҡатнашты. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар яҙғы сәсеү осоронда хәбәрселәрҙең һәм стена газеталарының бурыстары тураһында доклад тыңланылар.

Докладтан һуң кәңәшмәлә ҡатнашыусылар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

М. Хәйдәров.

... Сталин туплауа средстволарҙы ... менән файҙаланырға, уларҙың тара-... һәм урланыуына юл ҡуймаҫҡа, ... бер генә тине лә әрәм булмаһын ... бик ҡаты экономия режиме үтке-... әйрәтә.

... Сталин государство һәм коопе-... аппаратын, тауар үткәреү селтәрен ... юғарыға тиклем ҡыҫҡартыу, ... һәм ябайлаштырыу кәрәкле-... тураһындағы мәсьәләне бөтә киҫкен-... менән ҡуйҙы.

Государство аппаратын арзанайтыу һәм ... өсөн көрәш большевиктар ... һәм Совет хөкүмәте тарафынан ... ныҡлыҡ менән тормошҡа ашырылып ... һәм тормошҡа ашырыла. Был — ... партияның эшен яҡшыртырға һәм госу-... средстволарына экономия яһарға ... бирә. СССР Верховный Советы-... сессияһында 1951 йыл бюд-... тикшергән ваҡытта әйтелгәнсә, беҙ-... халҡ хужалығында идара эше сығым-... экономия яһау өсөн бөтә мөмкин-... файҙаланылмаған әле. Күп кенә ... һәм ведомстволар үҙ ап-... структураһын ябайлашты-... өсөн етерлек көрәшмәйҙәр, штаттарҙа ... хеҙмәт урындары булдырыуға юл ... Шуға күрә киләсәктә лә аппарат-... ябайлаштырыу һәм уны тотоуға китә-... сығымдарҙы ҡыҫҡартыу эшен ... рәүештә дауам иттерергә кәрәк.

Партия, иптәш Сталин совет кеше-... хеҙмәткә һәм общественный социа-... милеккә коммунистик мөнәсәбәттә ... рухында тәрбиәләй. Партия үҙенең ... социалистик милкте һаҡлау һәм уны ... үҫтереү өсөн булған көрәшендә иптәш ... «...эшселәр һәм крәҫтиәндәр ... шундай мораль атмосфера бул-... кәрәк, ул атмосфера урлау мөм-... сығарып ташлаһын, халҡ бай-... урлаусыларҙың һәм туҙҙырыусы-... йәшәүенә һәм булмыуына мөмкин-... бирмәһен...» (Әҫәрҙәр, 8 том, 136 — ...-сә биттәр) тигән күрһәтмәһенән сы-...

Партия, иптәш Сталин совет кешеләрен һәр төрлө туҙҙырыусылыҡҡа, хужаһыҙлыҡҡа ҡаршы көрәшкә туплай, уларҙы халҡ хужалығында бик ныҡлы экономия режиме һаҡлауға өйрәтә.

Беҙҙең көндәрҙә капиталь төҙөлештең ҡоласы бик киң йәйелгән, совет халҡы гигант коммунизм төҙөлештәре эшенә керешкән, халҡыбыҙҙың экономикаһын һәм культураһын көслө рәүештә артабан күтәреү бурыстарын хәл итә торған бер ваҡытта быларҙы финансировать итеү өсөн бик күп средстволар талап ителә. Беҙҙең илебеҙ был средстволарҙы эске резервтарҙа, промышленность эсендәге туплауманы файҙаланыу, бик ҡаты экономия режиме үткәреү юлы менән табып килде һәм таба. Хеҙмәтсәндәрҙең уңышлы рәүештә коммунизм төҙөү өсөн өҫтәмә резервтарҙы максималь рәүештә арттырыу маҡсаты менән көндән-көн үҫә барыусы көрәше был эштә бик ҙур роль уйнай.

Иптәш Сталин, яһалма пландарға ҡаршы иҫкәртеп, индустриялаштырыуҙы, ғөмүмән халҡ хужалығының, айырым алғанда, ауыл хужалығының торошон иҫәпкә алып, булған реаль ресурстарҙы һәм резервтарҙы иҫәпкә алып йәйелдерергә саҡырҙы.

«Беҙҙең промышленность бөтә халҡ хужалығы системаһында етәксе башланғыс булып тора, — тип әйтте иптәш Сталин, — ул халҡ хужалығын, шуның эсендә ауыл хужалығын да, алға этәрә, алға алып бара. Ул беҙҙең бөтә халҡ хужалығын үҙе төҫлө итеп үҙгәртеп төҙөй, ул крәҫтиәндәрҙе кооперация аша социалистик төҙөлешкә ылыҡтырып, ауыл хужалығын үҙ артынан алып бара. Ләкин беҙҙең промышленность, әгәр ул ауыл хужалығынан айырылмаһа ғына, әгәр ул беҙҙең туплауыу темпынан, беҙҙең ҡарамағыбыҙҙа булған ресурстарҙан һәм резервтарҙан ситкә китмәһә генә был етәксе һәм үҙгәртеп төҙөү ролен намыҫ менән үтәй ала» (Әҫәрҙәр, 8 том, 132-се бит).

Шулай итеп, илде индустриялаштырыу политикаһы тотошо менән халҡ хужалығын үҫтереүгә һәм, айырым алғанда, ауыл хужалығын социалистик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороуға юнәлдерелгәйне. Илде индустриялаштырыу ауыл хужалығын коллективлаштереү өсөн ҡеүәтле техник база тыуҙырҙы.

* * *

Иптәш Сталин «Советтәр Союзының хужалыҡ хәле һәм партияның политикаһы тураһында»ғы докладында, илде социалистик индустриялаштырыу буйынса булған бөйөк планды тормошҡа ашырыу өсөн индустрия төҙөүселәр кадры булдырырға, хужалыҡ төҙөлешө, промышленность буйынса яңы командный кадрҙар әҙерләргә кәрәк, тип күрһәтте.

Граждандар һуғышы осоронда партия һәм Совет государствоһы Ленин һәм Сталин етәкселегендә Ҡыҙыл Армияны төҙөү һәм һуғыш алып барыу буйынса яңы командный кадрҙар булдырҙылар һәм шуның арҡаһында Совет власеның бик күп дошмандарын еңеүгә ирештеләр. Яңы шарттарҙа, тыныс хужалыҡ, социалистик төҙөлеш шарттарында иптәш Сталин партия һәм Совет государствоһы алдына бик яуаплы бурыс ҡуйҙы:

«...Эшселәрҙән һәм совет интеллигенцияһынан, үҙенең яҙмышын эшселәр синыфы яҙмышы менән бәйләгән һәм беҙҙең менән бергә беҙҙең хужалығыбыҙҙың социалистик фундаментын төҙөй торған интеллигенцияның индустрия төҙөүселәренең күп һанлы кадрҙарын булдырырға», тине ул (Әҫәрҙәр, 8 том, 139-сы бит).

Артабан иптәш Сталин партияның һәм государствоның игтибарын совет халҡ интеллигенцияһын булдырыу бурысына күп тапҡырҙар туплаңы. Был тарихи бурысты хәл итеү юлдарын һәм методтарын күрһәтте. Иптәш Сталин эшселәрҙән һәм крәҫтиәндәрҙән яңы, халҡ интеллигенцияһын булдырыу һәм тәрбиәләү буйынса киң программа төҙөнө. Был программа еңеүле рәүештә тормошҡа ашырылды. Партия, иптәш Сталин тарафынан үҫтерелгән һәм тәрбиәләнгән совет халҡ интеллигенцияһы социализм төҙөүҙә бик ҙур роль уйнаны һәм хәҙерге көндә лә ул бөтә халҡ менән берлектә коммунизмдең еңеүе өсөн үҙ-үҙен аямай көрәшә.

Иптәш Сталин, илебеҙҙе индустриялаштырыуҙың тарихи бурысы СССР эшселәр синыфы үҙенең хеҙмәт һәм политик активлеген күтәргән шартта ғына хәл ителергә мөмкин, тип күрһәтте. Был активлек һуғыштан элекке сталинсе биш йыллыҡтар осорондағы ҡеүәтле социалистик ярышта бик асыҡ булып сағылды, был социалистик ярыш, иптәш Сталин әйткәнсә, беҙҙең төҙөлешебеҙҙең коммунистик методы булып тора.

Эшселәр синыфының, колхозсы крәҫтиәндәрҙең һәм совет интеллигенцияһының хеҙмәт һәм политик активлеге коммунистик төҙөлештең һуғыштан һуңғы осоронда бөтә халҡтың ысын социалистик ярышына әүерелде. Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, сырьё, материал, яғыулыҡ, электр энергияһына экономия яһау өсөн, продукция сифатын яҡшыртыу, оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү өсөн көрәш хужалыҡ төҙөлешебеҙҙең пландарын уңышлы үтәү өсөн бик ҙур өҫтәмә резервтар аса.

Иптәш Сталин үҙенең докладында социализмдең дошмандарына, Совет власеның нигеҙен — эшселәрҙең крәҫтиәндәр менән союзын әҙерга маташҡан дошмандарға аяуһыҙ отпор бирҙе. Иптәш Сталин капитализмде кире ҡайтарырға тырышыусы троцкиселәрҙе, зиновьевселәрҙе — империалистар үҙҙәренең колониялары үткәрә торған политиканы крәҫтиәндәргә ҡарата үткәрергә тәҡдим иткән был дошмандарҙы — фаш итте.

Иптәш Сталин, эшселәр менән крәҫтиәндәрҙең союзы — пролетариат диктатураһының нигеҙе, а пролетариаттың диктатураһынан башҡа бер генә бурысты ла уңышлы хәл итеүе мөмкин түгел, тигән ленинсе положениене партия бер генә минутҡа ла онотмай, тип айырыуса ныҡ әйтте. Шуға күрә эшселәрҙең крәҫтиәндәр менән союзын ҡомпартмаҫҡа, а көсәйтә барырға кәрәк. Иптәш Сталин былай тип күрһәтте: большевиктар партияһы теләһә ниндәй союзды яҡламай, а ул эшселәр менән крәҫтиәндәрҙең шундай союзын яҡлай, унда етәкселек роле коммунизм өсөн иң революцион һәм сынығыҡҡан көрәшсе булған эшселәр синыфы ҡулында булһын.

Эшселәр синыфының активлеген күтәреү һәм эшселәрҙең крәҫтиәндәр менән союзын нығытыу өсөн, ти иптәш Сталин, большевиктар партияһын активлаштерергә һәм уның сафтарының берҙәмлеген нығытырға кәрәк.

Большевиктар партияһы члендәренең активлеген көсәйтеү өсөн һыналған юл — ул партия эсендәге демократияны йәйелдереү. Иптәш Сталин партия эсендәге демократияны эҙмә-эҙлекле һәм ҡыйыу рәүештә үткәрергә, партиябыҙҙың яҙмышын хәл итеүсе партия массаларының активлеген күтәрә барырға, уларҙы социалистик төҙөлештең төп мәсьәләләрен тикшереүгә ылыҡтырырға, уларҙы партия ҡарарҙарының дөрөҫлегенә ышандырырға саҡырҙы. Партия эсендәге демократия, — ти иптәш Сталин, — партия массаларының активлеген күтәреү һәм партияның берҙәмлеген нығытыу, партияла аңлы пролетар дисциплинаны нығытыу ул.

Большевиктар партияһының көсө — уның дөрөҫ политикаһында һәм уның сафтарының берҙәмлегендә. «Беҙ элек иң менән көслө инек, — тине иптәш Сталин, — һәм хәҙер беҙ ни менән көслебеҙ? Дөрөҫ политика менән һәм сафтарыбыҙҙың берҙәмлеге менән» (Әҫәрҙәр, 8 том, 146-сы бит).

Үҙ сафтарының монолитлеге һәм халҡ массаларына оҫта етәкселек итә белеүе менән көслө булған һәм илебеҙҙе индустриялаштырыуҙың ленинсе-сталинсе политикаһы менән ҡоралланған большевиктар партияһы эшселәр синыфын һәм хеҙмәтсән крәҫтиәндәрҙе алдынғы индустрия өсөн, Тыуған илебеҙҙең быуаттар буйына килгән артталығын бөтөрөү өсөн фидакәр көрәшкә туплаңы. Социалистик индустриялаштырыу СССР хеҙмәтсәндәренең көрәш байрағына әйләнде. Социалистик индустриялаштырыу идеяһы, массаларға эйә булып, бик ҙур көс булып әүерелеп, бөтә совет халҡын бығаса күрелмәгән хеҙмәт батырлыҡтарына, бығаса күрелмәгән хеҙмәт героизмына күтәрҙе.

* * *

Социалистик индустриялаштырыуҙың уңыштары партияға, властә һуғышып алғандан һуң иң ауыр булған бурысты — ауыл хужалығын коллективлаштереү һәм кулактарҙы синыф булыу яғынан бөтөрөү бурысын алға ҡуйырға һәм уңышлы хәл итергә мөмкинлек бирҙеләр. Бының менән бик тәрән революцион борылош, общественың иҫке сифаттағы хәленән яңы сифаттағы хәленә һикереш яһалды.

Илебеҙҙә социалистик төҙөлештең еңеүе — илде индустриялаштырыу һәм ауыл хужалығын коллективлаштереүҙең ленинсе-сталинсе политикаһының бөйөк тантанаһы ул. Аҡыллы һәм алдан күреүсән был политика совет халҡына шуны тәьмин итте: совет халҡы Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында бөтә донъя әһәмиәтендәге тарихи еңеүҙәргә иреште һәм хәҙер тыныс, коммунистик төҙөлеш фронтында шундай уҡ еңеүҙәргә ирешә бара.

Илде индустриялаштырыу һәм ауыл хужалығын социалистик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороу тураһындағы ленинсе-сталинсе теория, үҙҙәренең коммунистар һәм эшселәр партияларының етәкселегендә уңышлы рәүештә алға, социализмдең еңеүенә табан бара торған халҡ демократияһы илдәренең хеҙмәтсәндәренә юл яҡтырта.

Социалистик индустриялаштырыуҙың һәм социалистик ауыл хужалығының уңыштарына, илебеҙҙә социализмдең бөтә донъя әһәмиәтендәге тарихи еңеүҙәренә таянып, совет халҡы, большевиктар партияһы етәкселегендә, иптәш Сталин етәкселегендә, хәҙер коммунистик общественың производство-техник базаһын булдырыуға йүнәлдерелгән бөйөк эштәрҙе йәйелдерә, коммунизмдең тулы тантанаһы өсөн фидакәр көрәшә.

Г. ПУХОВ.

Сәсеү орлоҡтарына иғтибарһыҙ ҡараш

«Булаҡ» колхозы Асҡын районының орлоҡсолоҡ хужалығы булып иҫәпләнә. Элиталәштерелгән һуң уның сәсеүлек майҙаны 1400 гектар тәшкил итә. Бөтә был майҙандарҙы сәсеүлектәр районының колхоздары өсөн сортлы орлоҡтар етештерергә тейеш.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, «Булаҡ» колхозы быйыл үҙен сортлы орлоҡ менән тәьмин итмәгән. Бөтә сәсеүлек майҙандарын ҡаплау өсөн 317 центнер бойҙай, 136 центнер һоло, 56 центнер ҡара бойҙай, 45 центнер борсаҡ, 7 центнер тары, 14 центнер вика, 2,25 центнер сумиза һәм башҡа күп төрлө культуралар орлоғо етешмәй.

Колхозда хатта туплаған орлоҡтар ҙа сәсеү кондицияһына еткерелмәгән. Улар насар һаҡланалар. Келәттәргә ҡар һыуҙары үтеп, улар орлоҡтарҙы боҙа башлаған.

Бойҙай орлоғо төрлө тапҡыр тикшереүҙә 70 — 80 процент, борсаҡ, арпа һәм башҡа культуралар ни бары 68 — 70 процент сығышлы булды. Шулай булһа ла, насар сығышлы орлоҡтарҙы алыштырыу сараһы күрелмәй.

— Беренсе анализдан һуң ҡайһы бер культураларҙы алмаштырып, тазартып, киптереү юлы менән сәсеү кондицияһына еткерәйек, — ти агроном иптәш Шиһапова. — Ләкин уларҙың сығышын тикшереү насар тора. Икенсе ай инде орлоҡ лабораторияһы яуап бирмәй.

Орлоҡ лабораторияһы мөдире иптәш Башҡаевтан ошондай һүҙҙәр ишетергә мөмкин:

— Һеҙ районда яңғыҙ ғына түгел, ә лабораторияға бер генә. Өлгөрөп булмай, — ти ул.

Район ауыл хужалығы бүлеге етешмәгән орлоҡтарҙы тупларға кеше колхозға ссуда биргән. Ләкин колхоз председателе иптәш Садреев уны ташыу сараһын күрмәй.

— Әлеге һәм тартыу көстәре етешмәй, — ти ул.

Келәттәге орлоҡтарҙың күбесе ҡыйҙы, лымлы. Гоголев системаһы сушилка булыуына ла, орлоҡтарҙы киптереү ойошторолмаған. Хәҙер орлоҡтарҙың ныҙыш бөрөлөү фактары ла бар.

Асҡын районының байтаҡ колхоздарында 10 мең центнер самаһы орлоҡ етешмәй. Сәсеүгә башлауға һанаулы ғына көн ҡалды. Ләкин Асҡында сәсеү орлоғо тупланыуы һис хәстәрләнмәй.

Ғ. Садиев, И. Шәйхетдинов — агротехник, **Ә. Вәсбиев** — «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының үҙ хәбәрсеһе.

Тракторҙар һаман да мастерскойҙа ултыралар

Өсө көндәрҙә Стәрлетамаҡ районының МТС-тарында яҙғы сәсеүгә әҙерлекте тикшереү үткәрелде.

Тикшереү һөҙөмтәһендә Услы һәм Стәрлетамаҡ МТС-тарында сәсеүгә әҙерлектә етди етешһеҙлектәр асыҡланы. Услы МТС-ында әле булһа 2 трактор, Стәрлетамаҡ МТС-ында 10 трактор мастерскойҙа ултыралар. Ремонттан сығарылған тракторҙарҙың ҙа сифаты насар. Комиссия күп кенә машиналарҙа дефекттар тапты. Тракторҙарҙа рулдәрҙе дөрөҫ көйләмәү, гусеницаларҙың башмаҡтары етмәү кеүек етди етешһеҙлектәр бар.

Был МТС директорҙары Рязанов һәм Ромов иптәштәрҙең ремонтты контролләмәүҙәренең һәм ремонттың сифатына иғтибар бирмәүҙәренең һөҙөмтәһе булып тора.

МТС-тарҙың партия ойошмалары механизаторҙарҙың алдынғы тәжрибәләрен популярлаштырыу менән шөғөлләнмәйҙәр, механизаторҙар араһында ремонтта тулыһынса файҙаланыу өсөн социалистик ярыш ойошторолмаған. Хатта механизаторҙар Иван Бугаевтың патриотик башланғысы тураһында бер нәмә лә белмәйҙәр. Был хәл МТС-тарҙа политик-массовый эштең бик насар ҡуйылыуын күрһәтә.

Был МТС-тар тағылма инвентарҙарҙы ремонтлауҙа ла һуҙалар. Услы МТС-ында 5 һабан, 6 культиватор, 4 сәскес әле булһа ремонтланмаған. Ә ремонтланған һабандарҙың күбесенең предплужниктары юҡ.

Машина-трактор станцияһы колхоздар менән договор төҙөүҙе әле булһа тамамламаған.

А. Клементьев.

Балтач МТС-ы яҙғы сәсеүгә әҙерлекһеҙ килә

Балтач. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Яҙғы баҫыу эштәрен яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн районың ҙур колхоздары уңышлы эшләйҙәр. Ләкин Балтач МТС-ы был әҙерлектә артта. МТС-та 85 тракторҙың 76-һы ғына ремонттан сығарылған. Уларҙың да тик 46-һы ғына колхоздарға ебәрелгән.

Баҫыу эштәре башлана, ә күпселек трактористар МТС-та йөрөйҙәр. Трактор бригадаларына бер баҫыу станы һәм вагончиктар булдырылмаған. Шулай булһа ла:

— Бөтә бригадаларҙа ла вагончиктар бар, — тип ышандырырға тырыша МТС директоры иптәш Ғафуров.

Балтач МТС-ында яҙғы эш осорона 4648 центнер яғыулыҡ һәм майлау материалдары талап ителә. Ләкин уларҙың 1925 центнеры ғына ташылып ҡуйылған. «Победа», «Октябрь» һәм «1 Май» колхоздарында бер килограмм да яғыулыҡ һәм майлау материалдары әҙерләнмәгән.

Колхоз автомашина менән бүләкләнде

Күгәрсен районы Ленин исемендәге артель члендәре (председателе иптәш Тухфәтуллин) 1950 йылда общественный малсылыҡты үҫтереүҙең государство планын срогынан алда үтәнеләр. Шуның өсөн СССР Ауыл хужалығы министерствоһы колхозды йөк автомашинаһы менән бүләкләне.

Районның колхоз фермаларында бөтәһе 994 кеше эшләй. Шуларҙан 112 кеше 1950 йылда общественный малсылыҡты үҫтереүҙә, малсылыҡтың продукт биреүсәнлеген күтәреүҙә тырыш хеҙмәт менән, яҡшы уңышлылыҡтарға өлгәшкәндәре өсөн өҫтәлмә хеҙмәт хаҡы алдылар. Уларға өҫтәмә түләү тәртибендә 91 баш ваҡ мал, 11 баш быҙау, 5106 килограмм игеп һәм малсылыҡ продукттары бирелде.

Х. Дәүләтшин.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 9 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Бөгөн СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының үҙҙәренең 26-сы ултырыштарына йыйылдылар. Великобритания вәкиле Дэвис председателлек итте.

Әлеккө ултырыштарҙағы кеүек, бөгөн дә 4 апрелдә СССР делегацияһы тарафынан индерелгән көн тәртибенең беренсе пункты проекты тураһында бәхәс барҙы. Бынан элек хәбәр ителгәнсә, был проект [illegible] бер формула [illegible] хатта Франция [illegible] мәжбүр булды. Ләкин, был проектка АҠШ, Великобритания һәм Франция делегациялары [illegible] кәңәшмәлә [illegible] булып, Германияны демилитаризациялау һәм дүрт держава ҡоралды көстәрен кәмәтеү проблемаларын ҡарауҙы юҡҡа сығарыу маҡсатын күҙҙә тота. Кәңәшмәнең тәүге көндәрендә Джессеп, Дэвис һәм Пароди был линияны асыҡтан-асыҡ алып барып, Германияны демилитаризациялау һәм дүрт державаның ҡоралланыуын һәм ҡоралды көстәрен кәмәтеү тураһындағы мәсьәләләрҙе көн тәртибенә индереүгә асыҡтан-асыҡ ҡаршы килһәләр, хәҙер инде уларҙың былай позицияларына общественностең киҫкен рәүештә кире мөнәсәбәттә булыуы арҡаһында, маскировка методтарына күсәләр. Улар һүҙҙә юғарыла әйтелгән ике төп проблеманы тикшереү тураһындағы тәҡдим менән килешһәләр ҙә, ғәмәлдә уларҙы күмеп ҡалдырырға, йәки, һәр хәлдә, һәр төрлө икеле формулировкалар менән уларҙың әһәмиәтен һаңға һуҡмай ҡалдырырға һәм артҡы планға күсерергә маташалар.

Джессеп, Дэвис һәм Пароди тарафынан уларҙың 2 апрелдәге тәҡдимдәрен яҡлап килтерелгән дәлилдәрен һәм юғарыла иҫкә алынған тәҡдимдәрен ентекләп тикшергәндән һуң, СССР вәкиле Громыко үҙенең күп кенә сығыштарында шуны күрһәтте: Совет тәҡдиме тыныслыҡты тәьмин итеүҙең ысын-ысындан киҫкен һәм өлгөрөп еткән проблемаларын беренсе урынға ҡуйған ваҡытта, өс державаның тәҡдиме был проблемаларҙың әһәмиәтен һаңға һуҡмай ҡалдырырға, сит ил эштәре министрҙәре Советенең уларҙы тикшереүен ҡыйынлаштырыуға йүнәлтелгән.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөгөнгө ултырышта ла АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре үҙҙәренең 2 апрелдә индерелгән тәҡдимдәрен алға һөрөүҙә дауам иттеләр.

СССР вәкиле Громыко сығыш яһап, былай тине: ҡайһы бер державаларҙағы билдәле круттарҙың агрессив политикаһын фаш итеүсе беҙҙең белдереүҙәребеҙ тураһында бәлки кем дә булһа, был — пропаганда, — тип әйтер. Ләкин, әгәр ҙә ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәмәтеүгә, тыныслыҡты нығытыуға һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға өлгәшеү тураһындағы талапты пропаганда тип атайҙар икән, ул ваҡытта бындай пропаганда менән шөғөлләнеү файҙалы һәм кәрәк. Ҡайһы бер көнбайыш государстволарҙа, уларҙағы хөкүмәттең актив ҡатнашлығында, бик иркен рәүештә алып барыла торған пропаганда менән шөғөлләнергә ярамай.

Советтәр Союзында башҡа төрлө ондәүҙәр, тыныслыҡты нығытыуға, дүрт державаның ҡоралды көстәрен кәмәтеүгә, Германия милитаризмының ҡабаттан тергеҙелеүенә юл ҡуймауға ондәүҙәр яңғырай. Совет кешеләре өс көнбайыш государство тарафынан үткәрелә торған политиканы, ҡоралланыу артынан ҡыуыу һәм Көнбайыш Германияла ҡоралды көстәр булдырыу политикаһын, йәғни һуғыш тоҡандырыу политикаһын киҫкен рәүештә ғәйепләйҙәр. Тап шуға күрә лә СССР делегацияһы Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләне, шулай уҡ дүрт державаның ҡоралланыуын һәм ҡоралды көстәрен кәмәтеү тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советенең көн тәртибенә индереүҙе ныҡышмалы рәүештә тәҡдим итә. Был тыныслыҡты нығытыу интересТарына шулай уҡ бөтә халыҡтарҙың, шул иҫәптән Америка, Англия һәм Франция халыҡтарының да төп милли интерестарына яуап биреүенә беҙ ышанабыҙ.

Өс көнбайыш держава делегацияһының тәҡдиме, киреһенсә, ҡоралланыу артынан ҡыуыуға, Германияны ҡабаттан милитаризациялауға йүнәлтелгән политиканы ҡәүҙәләндерә. Тап бына шуға күрә лә, көнбайыш державалар ошондай политика алып барғанға күрә лә, беҙ Германияны демилитаризациялау һәм ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәмәтеү мәсьәләләренә ҡағыла торған һәр бер һөйләмде ентекләп үлсәп ҡарайбыҙ һәм ул һөйләмдәр артына нимәләр йәшеренгәнлегенә иғтибар йүнәлтәбеҙ. Бер яҡтан ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәмәтеү тураһындағы мәсьәләне ҡарарға әҙербеҙ, тип белдереү яһаған, ә икенсе яҡтан — был мәсьәләнең әһәмиәтен нисек кенә булһа ла һаңға һуҡмай ҡалдырырға тырышҡан өс держава вәкилдәренең позициялары бер-береһенә ҡапма-ҡаршы килә, тип күрһәтәбеҙ. Беҙ көн тәртибенең тексын редактирлау менән, нөктәләренә һәм өтөрҙәренә тиклем үҙ урындарына ҡуйып, түҙемлелек менән шөғөлләнәбеҙ. Беҙ әле киләсәктә лә пункттарҙы, подпункттарҙы, айырым һөйләмдәрҙе редактировать итеү, нөктәләрен һәм өтөрҙәрен үҙ урындарына ҡуйыу менән шул тиклем үк түҙемлелек менән шөғөлләнергә әҙербеҙ, ләкин беҙ ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәмәтеү тураһындағы мөһим мәсьәләнең һәр төрлө икеле формулировкалар аҫтына күмелеп ҡалыуы менән килешә алмайбыҙ.

Был мәсьәләнең икенсе яғына, атап алғанда, һүҙ дүрт державаның ҡоралланыуын һәм ҡоралды көстәрен кәмәтеү тураһында барырға тейешме, йәки **ғөмүмән** ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәмәтеү тураһында барырға тейешме, тигән мәсьәләгә килгәндә инде, Совет делегацияһының был мәсьәләләге позицияһы тулыһынса етерлек итеп әйтеп бирелгәйне. СССР делегацияһы, дүрт министр бары тик **дүрт державаның** ҡоралланыу һәм ҡоралды көстәрен кәмәтеү тураһындағы мәсьәләне генә ҡарай ала, тип иҫәпләй. Был мәсьәләне **ғөмүмән** ҡоралланыуҙы һәм ҡоралды көстәрҙе кәмәтеү тураһындағы мәсьәлә менән алмаштырыу, ҡоралды көстәрҙе кәмәтеү тураһындағы мәсьәләне ҡарауҙан баш тартыу менән бер буласаҡ.

Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәлә, 4 апрелдәге Совет тәҡдиме менән күҙҙә тотолғанынса, көн тәртибендә үҙ әһәмиәтенә лайыҡлы булған урын алырға тейеш, тип айырыуса күрһәтеп, Громыко һүҙе ахырында ошоларҙы әйтте:

— Министрҙәр Атлантик пакт тураһындағы һәм Англияла, Норвегияла, Исландияла һәм Европаның башҡа илдәрендә, шулай уҡ Яҡын Көнсығышта Американың хәрби базалары төҙөлөүе тураһындағы мәсьәләне тикшерергә тейештәр, тип иң өсөн иҫәпләгәнебеҙҙең сәбәптәрен күрһәткәйнек инде. Беҙ был тәҡдимде шуға күрә индерҙек, сөнки был мәсьәләнең Европала халыҡ-ара хәлдең көсөргәнешле булыуының сәбәптәрен бөтөрөү һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу бурыстарына туранан-тура мөнәсәбәте бар. АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре был мәсьәлә буйынса бары тик ҡыҫҡаса белдереүҙәр менән генә сикләнделәр. Ләкин беҙ Атлантик пакт тураһындағы һәм күп кенә илдәрҙә Американың хәрби базалар төҙөүе тураһындағы мәсьәләне урап үтергә мөмкин түгел тип иҫәпләйбеҙ.

* * *

Дэвис, Джессеп һәм Пароди сығыштарынан һуң ултырыш ябылды. Улар үҙҙәренең был сығыштарында ла өс держава делегацияһының тәҡдимдәрен яҡлау өсөн килтерелгән нигеҙһеҙ дәлилдәренә бер нәмә лә өҫтәмәнеләр.

* * *

ПАРИЖ, 10 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Бөгөн СССР вәкиле А. А. Громыко председателлегендә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең нәүбәттәге ултырышы булды.

СССР делегацияһы көн тәртибенең беренсе пункты проектын индергәнгә бер аҙна ваҡыт үтте инде. Билдәле булғанынса, СССР делегацияһы 4 апрелдә индергән үҙенең проектына АҠШ, Великобритания һәм Франция делегацияларының төп тәҡдимдәрен дә өҫтәгәйне. Килешеүгә өлгәшелгән булырға тейеш ине инде. Хатта Францияла сыға торған уң газеталар ҙа, әгәр ҙә Көнбайыш державаларҙың делегациялары Совет проектын кире ҡаҡһалар, улар шуның менән килешергә өлгәшергә теләмәүҙе бик законлы ғәйепте үҙ өҫтәренә алырҙар, тип белдереп, быны икрар иттеләр. Шуға ҡарамаҫтан, АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре үҙҙәренең 2 апрелдә индергән тәҡдимдәрен ныҡышмалы рәүештә үткәрергә тырышалар. Ул тәҡдим тыныслыҡты тәьмин итеүҙең иң мөһим проблемаларын — Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләне һәм дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен кәмәтеү тураһындағы мәсьәләне ситләп үтә. Өс көнбайыш держава вәкилдәре Совет проектына ҡаршы килеүҙә дауам итәләр. Парижда сыға торған ҡайһы бер газеталарҙың хәбәрҙәре кәңәшмәнең һуҙылыуының ысын сәбәптәрен общественность алдында асып һала. Джессептең беренсе советнигы Болен, тип яҙа «Комба» газетаһы, — кәтмәгәндә Вашингтонға китте. Һәм был хәлдең борсолоу тыуҙырмауы мөмкин түгел, сөнки Болен һөйләшеүҙәрҙе мөмкин тиклем тиҙерәк тамамларға теләүсе йәшермәй. «Ул үткән аҙнала уҡ инде «ике аралағы күперҙе яндырырға» һәм компромисстарға ҡамасаулыҡ итергә тырышты».

Бөгөн Громыко ултырышты асып, былай тине: Совет делегацияһы үҙе тарафынан тәҡдим ителгә[н] ... килешеү өсөн реаль нигеҙ ... тип иҫәпләй. Ул дүрт д... ныуын һәм ҡоралды к... тураһындағы төп мәсь... планға ҡуя һәм икенсе ... ҡоралланыуҙың һәм ҡорал... кимәле тураһындағы һәм ... ара контроль урынлаштыр... дағы мәсьәләне лә министр... на ҡуйыуҙы күҙҙә тота.

Громыконың сығыштары ... вәкилдәре тарафынан бер... СССР вәкиле яһаған һығ... һәм нигеҙле булыуын тағ... ҡыр раҫланы. Пароди ме... ҡоралланыуҙар һәм ҡоралл... лемаһының уларҙы кәмәт... ҡаралыу проблемаһы мен... майбыҙ, сөнки көнбайыш ... ралланыуҙы арттырыу поли... барҙылар, тип асыҡтан-асыҡ ... Көн тәртибендә ҡоралл... дағы мәсьәләне уларҙы ... нән тикшереүҙе күҙҙә тот... ли, — әтимәк беҙҙең (көн... державаларҙың) хөкүмәттәр... алып барыла торған полити... ғәйепләү тигән һүҙ». Дэв... уҡ һүҙҙәрҙә әйтте.

Дэвис менән Пародиҙың ... ипеләренә ҡағылып, Громы... не:

— Совет делегацияһы ... вәтенең көн тәртибендә ... хөкүмәттең политикаһы ... күрһәтергә тәҡдим итмәй ... итмәй. Беҙ сит ил эштә... Советенең сессияһында дүрт ... ҡоралланыуҙарын һәм ҡорал... кәмәтеү тураһындағы мәсь... ләүен теләйбеҙ. Ә өс держав... тарафынан бөгөн яһалған ... уларҙың нигеҙҙә был мәсьә... теләмәгәнлектәрен тағы ла ... күрһәтә. Өс держава вәкил... *жаваның ҡоралланыуҙары* һ... көстәрен кәмәтеү бурысын ... ҙын кимәле тураһындағы ко... алмаштырырға теләйҙәр, ә у... да нимәне күҙҙә тотҡанлығ... Великобритания һәм Франци... алып барылған ҡоралланыу ... уыуҙы яҡлағанлыҡтары уҡ ... рәүҙәренән үк күренеп тора.

— Беҙ, — тине Громыко, ... тәрҙең бөтәһен дә бүтән ... рацияларға ғына ҡайтарыу... ҡаршыбыҙ. Беҙ шулай уҡ дүрт ... ның ҡоралланыуҙарын һәм ... көстәрен кәмәтеү кеүек ... мәсьәләне һәр төрлө ... тына күмеп ҡалдырыуға ла ...

Громыко шулай уҡ ултыр... куссия барышында былай ти... тик пакт тураһында һәм Англия... вегияла, Исландияла һәм Европ... ҡа илдәрендә, шулай уҡ Яҡ... ғышта Американың хәрби база... тураһында Совет делегацияһы ... индерелгән мәсьәләлә ... ҡалғанлығына өс держава ... иғтибарын йүнәлткәйнем.

— Джессеп, Дэвис һәм Пар... палағы обстановканы ... шулай уҡ бөйөк дүрт держа... дағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу ... һим әһәмиәткә эйә булған ... әлә тураһында ... раҡ тип иҫәпләнеләр, — тине...

ҘУР КОЛХОЗДЫҢ ИРТӘГӘҺЕ

Район үҙәге — Николо-Березовка артта ҡалды. Юл Кама йылғаһы буйлап бара. Оҙон көҙ буйы аҡ күбектәрен сәсеп ҡотороп, арыған ғорур Кама йылғаһы ҡыш буйына ҡалын ҡар аҫтында, шыршы һәм ҡарағай урмандары ышығында тыныс ҡына йоҡланы.

Ләкин был ваҡытлы хәл ине. Яҙ килде лә, уны был тыныс йоҡоһонан уятты. Ҡалын ҡар, зәңгәр боҙ аҫтынан ташып сығып, һыу киң йәйелеп ятҡан туғайҙарҙы ҡаплап алды. Кама һыуын әсеп туйған киң туғай оҙаҡ та үтмәҫ йәшел хәтфәгә төйәнер, днигеҙ кеүек тулҡынланып торған бесәнлек үҫер.

Бөгөнгө бөктәр яҙҙы һәр нәмәгә йомарт, һәр нәмәгә бай булған йәй алыштырыр. Киң туғайҙарҙа яңғыраған салғы сыңлауына, мотор гөжләүенә колхоз ҡыҙының көмөш тауышы ҡушылып бөтөн бер хеҙмәт симфонияһы яңғырар. Күңелле, бик күңелле булыр ул сағында Кама йылғаһы буйында.

Кама йылғаһы буйлап һуҙылып киткән һәм ҡарағай, шыршы, ҡайын ҡайын урмандары аша үткән бороламалы юл, беҙҙе Краснокам районының Ҡабан ауылына алып килә. Был ауыл Советтең Карл Маркс исемендәге эрелләтелгән ҙур колхозы тәбиғәттең бына ошондай бер матур ерендә, ике мәғрур йылға — Кама менән Ағиҙел йылғалары ҡушылған урында ултыра.

Ҙур колхоздың үҙәге Ҡабан ауылы үҙенең урта мәктәбе, больницаһы, ветеринария пункты, почтаһы, государство һаҡлыҡ кассаһы, ҙур магазиндары, ике ҡатлы таш клубы һәм башҡа күп төрлә общественный биналары менән район үҙәген йәки берәй эшселәр посёлкаһын күҙ алдына килтереп баҫтыра.

Кешеләр бында бер нәмәгә лә мохтаж түгелдәр. Артыҡ аҡсаң булһа — һаҡлыҡ кассаһына, әйбер кәрәк булһа — магазиндарға, күңел асаһың, культуралы ял итәһең килһә — клубҡа рәхим ит!

Ауылдың иң матур бер ерендә колхоз правлениеһы. Оҙон юл беҙҙе бына ошо йортҡа алып килде.

— Колхоз партия ойошмаһы секретаре Нуретдинов, — тип тәҡдим итте беҙгә үҙен бер иптәш.

Ғәҙәт буйынса яңы дуҫ менән яҡшы итеп күрештек, иҫәнлек-һаулыҡ һорашлыҡ, ә унан һуң инде, ҙур колхоздың бөгөнгө көнө һәм иртәгәһе тураһында һораша башланыҡ.

— Яҙғы сәсеүгә әҙерлек тураһында шуны ғына әйтәм, бөтә культуралар буйынса ла орлоҡ етерлек. МТС-тың 10 тракторы бөгөндән баҫыуға сығырға әҙер тора — бөгөнгө көн тураһында бына шул. Әгәр, оҙон юл килеп арымаған булһағыҙ башҡа мәсьәләләр буйынса эш урынына барып һөйләшергә мөмкин.

Беҙ риза булдыҡ. Бына әлеккә ҙур булмаған йылға аша һалынған күпер аша үтеп килеп еттек. Иптәш Нуретдинов күперҙән яҡ урта бер ерендә туҡталды.

— Бына тап ошо урында был йәй ҙур быуа ҡороп, 3 ташлы һыу тирмәнен эшкә ҡушасаҡбыҙ, — тине.

— Әлек бында тирмән юҡ инеме ни?

— Ҡасандыр булған да бөткән, беҙ уны бына тергеҙеп һаласаҡбыҙ. Әнә тегә ҡалҡыулыҡта биш йөҙ точканы хеҙмәтләндерергә тейеш булған радиоузел һалынасаҡ, уның аппараттары ла, сымдары ла, бағаналары ла әҙер инде. Көҙгә рәхим итегеҙ, лекцияғыҙҙы микрофон аша ғына һөйләрһегеҙ...

— Быйыл шулай ҙур төҙөлештәр үткәрергә планлаштырҙығыҙмы ни?

— Эйе, кирбес заводы, дүрт урында сушилка, сусҡалар, һарыҡтар һәм ҡоштар өсөн торлаҡтар һәм башҡалар төҙөлергә тейеш. Үҙегеҙ беләһегеҙ, кисәге бәләкәй колхоздың ҡаралтылары бөгөнгө ҙур колхоз өсөн бөтөнләй ярамай. Өлгәгеҙ, малсылыҡ фермаларына барайыҡ әле, улар өсөн ниндәй ҙур төҙөлеш эштәрен алып барырға кәрәклеген үҙ күҙегеҙ менән күрерһегеҙ.

Беҙҙе бер йәш кенә ҡыҙ ҡаршыланы.

— Беҙҙең фермалар мөдире иптәш Солтанова! — тип тәҡдим итте партия ойошмаһы секретаре.

Фермалар мөдире бик булдыҡлы, бик етеҙ ҡыҙ булып сыҡты. 327 баш һыйыр, 771 баш һарыҡ һәм 109 баш сусҡаның исемдәрен генә түгел, хатта холоҡтарын да һөйләп бирә ул.

— Сусҡаларҙы бер кемгә лә ышанмайым, үҙем ҡарайым, — тип өҫтәп ҡуя.

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, беҙ бик күп колхоздарҙа һәм фермаларҙа булдыҡ. Ләкин сусҡаларға булған бындай тәрбиәле һәм уларҙың бындай һимеҙлеген, таҙалығын күргәнебеҙ юҡ ине әле.

— Тауыҡ — ҡош түгел, сусҡа — мал түгел тигән иҫке ҡараш ферма работниктәре араһында күптән бөттө инде, беҙҙең ферма малдарының бөтәһен дә берҙәй яратабыҙ, — ти Ғәлиәһан.

Беҙ был ысын йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәргә төрән ышандыҡ. Сөнки йәш быҙауҙар торлағында ла, бәрәстәр бүлмәһендә лә, сусҡа балалары йортонда ла — һәр ерҙә тәртип, таҙалыҡ.

Ферма кухняһы алдында йәш бер бала сынаяҡ киҫәктәре ваҡлап ултыра.

— Был былла киҫәктәре нимә кәрәк ҡустым, — тип һораныҡ беҙ унан.

Ул маңлайына төшкән бөрөгөн күтәреп ҡейҙе лә, беҙгә таба боролоп, бер аҙ ғәжәпләнеп ҡарап торҙо.

— Тауыҡтарға ашарға кәрәк, юҡ иһә үҙ йомортҡаларын үҙҙәре эсәләр, йә булмаһа бер-береһенеке урлайҙар, — тип яуап бирҙе.

— Эсһәләр ни, таҙарыҡҙар...

— Ә государствоға нәмә?..

Баланың һуңғы яуабынан беҙ бик ҡәнәғәт булып башынан һыйпап киттек.

— Шулай кәрәк, иптәш, государство өсөн йәшәргә кәрәк!

Ферма ҡапҡаһынан сыҡҡас та партия ойошмаһы секретаре ҡапыл туҡтаны һәм мал һарайҙарына ҡарап:

— Күрҙегеҙме инде... Бынан өс ай элек кенә әле был биналар беҙҙе ҡәнәғәтләндерә ине, ә бөгөн бөтөнләй тар. Ә киләһе йылға тағы ла тарыраҡ буласаҡ. Бына ни өсөн иртә яҙҙан уҡ яңы яҡшы торлаҡтар төҙөй башларға кәрәк.

— Төҙөлөш материалдары менән эш нисек тора һуң?

— Ете йөҙ кубометр әҙерләнгән. Уның менән дә бик күп эштәр башҡарырға мөмкин.

Колхоз ауылында хеҙмәт көнө бөттө. Тормош ауылдың культура үҙәгенә — клубҡа күсте. Йәштәр ҙә, ҡарттар ҙа шунда ағылалар. Унда бөгөн халыҡ-ара хәл тураһында лекция уҡыласаҡ һәм унан һуң 10 класс уҡыусылары, колхоз йәштәре тарафынан М. Фәйзиҙең «Ғәлиәбаныу» пьесаһы ҡуйыласаҡ.

Әле халыҡ йыйылып бөтмәгән. Йәштәр был ваҡытты бик дөрөҫ файҙаланалар. Тальян гармон «Ҡарабай» һәм «Әлипә» көйҙәрен һыҙҙыра, ә егеттәр, ҡыҙҙар бейейҙәр.

— Һеҙҙә бындай күңел асыу кисәләре йыш буламы? — тип һораныҡ беҙ урта мәктәп директоры иптәш Асадуллиндән.

— Айға өс тапҡыр кинокартина күрһәтелә, ике-өс тапҡыр постановка, лекциялар була.

Һөйләшә торғас, ҙур залдың халыҡ менән шығырым тулғанын һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Һуңғы тапҡыр ишек асылды һәм аҡ һаҡаллы бер бабай килеп инде.

— Әхтәри ағай ҙа килеп етте, башларға мөмкин, — тип ҡысҡырҙы берәү.

Кем һуң ул Әхтәри ҡарт? Әллә колхоз председателеме? Юҡ, ул ябай һәм тырыш бер колхозсы. Уны һәр эштә, һәр ерҙә алдынғылар сафында күреп була. Шуның өсөн уға ҡарты ла, йәше лә ихтирам менән ҡарай.

— Һуңғараҡ ҡалдым бугай шул, йәштәр, ярар инде бер юлға ғәфү итерһегеҙ... — Әхтәри ҡарт бына шулай ғәфү үтенде һәм иң алғы рәткә килеп ултырҙы.

Кисә башланып китте.

— Һинә нисек беҙҙең артистар оҡшанымы... Шулай иптәштәр яҡшы эшләгән кеүек матур итеп ял итә лә белергә кәрәк, — тине партия ойошмаһы секретаре клубтан өйгә ҡайтырға сыҡҡас.

Кисәгеҙ ҙә, кешеләрегеҙ ҙә бик оҡшаны. Алда тағы ла матур тормош, тағы ла күңеллерәк кисәләр теләйбеҙ, тинек беҙ уға.

Тимер Алюн.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы ба[ш] командованиеһе[нең] белдереүе

ПХЕНЬЯН, 11 апрель (ТАСС). ... халыҡ-демократик республикаһы ... мияһы баш командованиеһе... тапшырған хәбәрендә, фронт... участкаларында ла Халыҡ армия... ре Ҡытай добровольцтары менән ... дошманға ҡаршы көслө һуғыш... барыуҙа дауам итеп, дошманға ... тыуҙар килтерәләр, тип әйтелә.

Редактор Ғ. Ғ. Ға...

И. В. Сталиндең

башҡорт теленә тәрж[ем]ә ителгән 16 томлы[ҡ] әҫәрҙәренә

Книготорг магазиндары[...] „Союзпечать" бүлектәре тарафы[нан] подписка ҡабул ит[елә].

Беренсе том 1951 йыл[дың] апрель айында баҫы[лып] сығасаҡ.

Башҡорт АССР-ы[ның] Книготоргы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-23.

П02435.

Өфө газеталары издательствоһы типографияһы.

Тираж 3...

Бөтә илдәрзең пролетарийзәре, берләшегез!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-СЕ ЙЫЛ СЫҒА.

1951 йыл
№ 73 (8790)
14
АПРЕЛЬ
шәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЫНДА ҺӘМ ВКП(б) ӨЛКӘ КОМИТЕТЫНДА. Башҡортостанда урман һәм баҡса ағастары ултыртыу буйынса ун көнлөк үткәреү тураһында (1-се бит).

Ә. Сафиуллин. — Ағас ултыртыу планын арттырып үтәйәсәкбеҙ (1-се бит).

Г. Денисенко. — Академик Лысенко методы буйынса (1-се бит).

«ВКП(б) ТАРИХЫНЫҢ ҠЫҪҠАСА КУРСЫН» ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘРГӘ ЯРҘАМҒА. Д. Феклясов. — Иптәш Сталиндың «Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында» тигән китабы (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Илгә күберәк металл биреү өсөн көрәш — Белорет коммунистарының намыҫ эше (2-се бит).

ЭКОНОМИК ТЕМАҒА. С. Мәүлитов. — Баҫыусылыҡ бригадаларындағы бөтә резервтарҙы файҙаланайыҡ (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. Е. Носиков. — Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу (3-сө бит).

А. Әхмәров. — Картоф орлоғон яровизациялаштырыу (3-сө бит).

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР. Х. Йосопов. — Общественный малсылыҡҡа иғтибар бирмәйҙәр (3-сө бит).

В. Бартеньев. — Ни өсөн механизм файҙаланылмай (3-сө бит).

Е. Сальников. — Быуала балыҡ үрсетеү (4-се бит).

ФЕЛЬЕТОН. М. Шуғанов. — Фанер таҡта артаһында (4-се бит).

Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

УРМАН ПОЛОСАЛАРЫ УЛТЫРТЫУҘЫ АГРОТЕХНИК СРОКТА ҮТКӘРӘЙЕК!

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планы буйынса билдәләнгән бөйөк эштәр инде өсөнсө йыл тормошҡа ашырыла. Республикабыҙҙа баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ағастары ултыртыуҙың 1949—1950 йылғы пландары 118 процентҡа үтәлде. Академик Т. Д. Лысенко методы буйынса имән сәтләүектәрен оялап ултыртылған урман полосалары ғына ла хәҙер 4 мең 572 гектар тәшкил итә. Былтыр көҙ үткәрелгән тикшереүҙәр бөтә урындарҙа ла сәселгән ағастарҙың 91 процентҡа үҫешләнеүҙәрен күрһәттеләр.

Республикабыҙҙың колхоздары һәм совхоздары баҫыу һаҡлаусы урман полосаларының ауыл хужалығы культуралары урожайлылығына ыңғай йоғонто яһауын хәҙер практикала күрәләр. Бүздәк районының «Сыртлан» колхозы бөтә баҫыуҙарҙы урман полосалары менән әйләндереп алыуға һәм улан баҫыулы сәсеү әйләнештәрен үҙләштереүгә өлгәшеүе һөҙөмтәһендә былтыр ҙур майҙандарҙа юғары урожай алды. Учалы районы «Урал» колхозы 125 гектарҙың һәр гектарынан 25-әр центнер урожай алыуға өлгәште.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ағастарын үҫтереүҙә хәҙер бай тәжрибәләр бар. Бәрә, Янауыл, Дүртөйлө, Ҡандра һәм башҡа райондарҙың колхоздары, Шишмә, Дәүләкән, Стәрлетамаҡ, Ҡаҙанғол совхоздары, Бәләбәй, Иглин, Дыуан, Тирлән лесхоздары ағас ултыртыу пландарын йыл һайын арттырып үтәйҙәр.

Башҡортостанда хәҙер яҙғы ағас ултыртыу осоро башланды. Яҙ иртә килгән райондарҙа был эш киң йәйелдерелә. Хәйбулла районы колхоздары баҫыу һаҡлаусы ағастар ултыртыу өсөн көҙҙән тунға һөрөп ҡалдырылған майҙандарҙы тырмалауҙы тамамланылар. «Красная звезда», «Красное знамя» һәм Калинин исемендәге ауыл хужалығы артелдәре баҫыу эштәренең тәүге көндәрендә үк 26 гектар майҙанда ағас ултырттылар.

Быйыл ағас ултыртыу майҙандарының күләме былтырғыға ҡарағанда ҙур. Колхоздарҙа 14 мең гектар, совхоздарҙа 1 мең 400, лесхоздарҙа 17 мең 300 гектар майҙанда ағас ултыртылырға тейеш. Шулай уҡ бөтә урындарҙа элек ултыртылған урман полосаларын тулыландырырға кәрәк. Бынан тыш, көҙ һәм алдағы йылда ағас ултыртыу өсөн пар ерҙәре һөрөп ҡалдырыу талап ителә.

Колхоздарҙы эреләтеү айҡанлы сәсеү әйләнештәре баҫыуҙары, бригадаларҙың участкалары үҙгәртелде. территориялар ҡайтанан ойошторолдо. Был хәл баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын урынлаштырыу буйынса ла үҙгәрештәр үткәреүҙе талап итә.

Колхоздарҙы эреләтеү һөҙөмтәһендә шулай уҡ ағас ултыртыу өсөн былтыр көҙ тунға һөрөлгән махсус ерҙәр дөйөм сәсеүлек майҙандарына ҡушылды һәм быйыл ағастарҙы бына был дөйөм майҙандарҙағы тупраҡта ултыртырға тура килә. Бындай майҙан 4000 гектар тәшкил итә. Ағас ултыртыуҙан элек бөтә был майҙанды яңынан тәрәнәйтеп эшкәртеү талап ителә.

Башҡортостанда быйыл бөтәһе 33 мең гектар майҙанда ағас ултыртыу өсөн бик күп ултыртыу материалдары талап ителә. Был эшкә ныҡ иғтибар иткән урындарҙа колхоз һәм совхоз ағас үҫтереү питомниктары уңышлы эшләйҙәр һәм үҙҙәрен ултыртыу материалдары менән тулыһынса тәьмин итәләр.

Республикала быйыл яҙ ултыртыу өсөн тағы ла 66 миллион төп үҫенте ағастар талап ителә. Хәҙер, урман полосалары майҙандарында тупраҡты әҙерләүҙе алып барыу менән бер үк ваҡытта, колхоз-ара һәм совхоз-ара питомниктарҙан ултыртыу материалдары ташыуҙы ойоштороорға кәрәк.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһының ҡарары менән республикала баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ағастары ултыртыу буйынса 20 апрелдән алып 30 апрелгә тиклем ун көнлөк иғлан ителде. Ошо ваҡыт эсендә һәр бер колхозда, совхозда һәм лесхозда ағас ултыртыуҙың йыллыҡ планын тулыһынса үтәү өсөн көрәш ойошторорға кәрәк. Был маҡсатта ағас үҫтереүсе звенолар һәм бригадалар өсөн бөтә эш шарттарын тәьмин итеү менән бергә, уларға ярҙамға өҫтәмә эшсе көстәре беркетелергә, урмандарҙан ултыртыу материалдары әҙерләү өсөн мәктәп балалары һәм пионерҙар ылыҡтырылырға тейеш. Тупраҡ эшкәртеүҙә, ағас ултыртыуҙа һәм ағас орлоҡтары сәсеүҙә ЛЗС-тарҙың һәм МТС-тарҙың машина техникаһын тулы көсөндә файҙаланыуҙы тәьмин итергә кәрәк.

Ағас ултыртыуҙа агротехника талаптарына, баҫыу һаҡлаусы урман полосалары төҙөүҙең конструкцияһына, ағастарҙың тоҡомона ныҡ иғтибар ителергә тейеш. Ауыл хужалығы специалистары — агролесомелиораторҙар, агрономдар, агротехниктар был өлкәлә колхоздарға практик ярҙам күрһәтергә бурыслылар. Район ауыл хужалығы бүлектәренән, МТС һәм ЛЗС директорҙарынан, колхоз һәм совхоз етәкселәренән яҙғы ағас ултыртыу планын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн бөтә сараларҙы күреү талап ителә. Урындарҙағы партия, совет ойошмалары ағас ултыртыуҙың ун көнлөгө айҡанлы май алды социалистик ярышын ойоштороу буйынса массовый-аңлатыу эштәрен киң йәйелдерергә тейештәр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында һәм

ВКП(б) Өлкә Комитетында

Башҡортостанда урман һәм баҡса ағастары ултыртыу буйынса ун көнлөк үткәреү тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы, баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын ултыртыу, ағас орлоҡтары сәсеү, соҡорлоҡтарҙа, үҙәнлектәрҙә ағастар ултыртыу, баҡсалар булдырыу һәм элек ултыртылған бөтә урындарҙы тулыландырыу һәм онҡҡа баҫтырыу буйынса йыллыҡ планды яҙғы осорҙа үтәү, шулай уҡ ағас үҫтереү буйынса государство һәм колхоз питомниктары булдырыу, МТС, совхоз, мәктәп, больница усадьбаларын һәм ауылдарҙы йәшелләндереү маҡсаттарында ошо йылдың 20 апреленән 30 апреленә тиклемге осорҙа Башҡортостанда урман һәм баҡса ағастары ултыртыу ун көнлөгө үткәрергә ҡарар иттеләр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы район һәм ҡала Советтары исполкомдарын, ВКП(б)-ның район һәм ҡала комитеттарын был ун көнлөктә баҫыуҙарҙа, соҡорлоҡ-үҙәнлектәрҙә ағас ултыртыу һәм ағас орлоҡтары сәсеү, элек ултыртылған урындарҙы яңы ағастар менән тулыландырыу һәм аяҡҡа баҫтырыу, баҡсалар, государство һәм колхоз ағас үҫтереү питомниктары булдырыу буйынса бөтә колхоз, совхоз, лесхоз һәм ағас үҫтереү питомниктарының пландарын үтәүҙе тәьмин итергә, шулай уҡ ҡалаларҙа, эшселәр посёлкаларында, район үҙәктәрендә, совхоз, МТС, мәктәп, больница усадьбаларында һәм колхозсыларҙың, эшселәрҙең, хеҙмәткәрҙәрҙең усадьбаларында массовый рәүештә декоратив һәм емеш-еләк ағастары ултыртыуҙы ойошторорға мәжбүр итте.

Быйыл ағас ултыртыу эштәре юғары агротехник кимәлдә үткәрелергә тейеш.

Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министрлығына, совхоздар тресттарына, урман хужалығы управлениеһына һәм уларҙың урындағы органдарына, район Советы исполкомдарына, ВКП(б) райкомдарына түбәндәгеләрҙе эшләргә йөкмәтелде: улар үҙҙәре өсөн бүленгән имән сәтләүектәрен һәм башҡа ағас орлоҡтарын, ултыртыу материалдарын һис кисекмәҫтән ташып алырға, массовый рәүештә урмандарҙа имән сәтләүектәре йыйнарға һәм йәш ағас үҫентеләре ҡаҙып әҙерләргә — бөтә был эштәрҙе ойоштороу менән яңы урман полосалары булдырыу һәм иҫкеләрен тулыландырыу буйынса йыллыҡ пландың үтәлеүен тәьмин итергә тейештәр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы ВЛКСМ Өлкә Комитетын (иптәш Саяповты), Башпрофсоветты (иптәш Улинде). Мәғариф министрлығын (иптәш Әлибаевты) түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итте: колхоздарҙа ултыртыу материалдары әҙерләүҙә, шулай уҡ усадьбаларҙы һәм халыҡ йәшәй торған пункттарҙы йәшелләндереүҙә практик ярҙам күрһәтеү өсөн комсомолецтарҙың, профсоюз һәм пионер ойошмаларының, институт, техникум һәм мәктәп уҡыусыларының актив ҡатнашыуҙарын тәьмин итергә.

Ағас ултыртыу планын арттырып үтәйәсәкбеҙ

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планын тормошҡа ашырыуҙың мөһим бер тармағы — колхоз баҫыуҙарында урман полосалары булдырыу. Беҙҙең колхозда был эшкә ныҡлы иғтибар ителә. Колхозда махсус бригада баҫыу һаҡлаусы урман полосалары үҫтереү эше менән шөғөлләнә. Мин ошо бригадаға етәкселек итәм.

Ағас үҫтереү еңел эш түгел. Ул йылдар буйына ныҡышмалы эшләүҙе талап итә. Беҙҙең бригада 1949 йылда 3 гектар һәм 1950 йылда 6,5 гектар майҙанда ағас ултыртты. Ултыртылған ағастар 92 — 99 процентҡа үҫешләнде. Тәүге йылдарҙа ултыртылған ағастарҙың өҙөнлөктәре хәҙер инде 2 — 3 метрға етә.

Урман полосаһы яҡшы тоҡомло ағастарҙан торорға тейеш. Беҙ быға ныҡ иғтибар итәбеҙ. Шуға күрә беҙҙең урман полосаларында үҫтерелгән ағастар араһында ҡайын һәм имән ағастары күпселек алып тора. Беҙ имәнде академик Т. Д. Лысенко методы буйынса үҫтерәбеҙ. Имән [illegible] ояла ултыртыла. 1950 йылда ошо рәүештә ултыртылған имәндәр хәҙер 10 — 15 сантиметрға етте.

Беҙҙең колхоз [illegible] эреләтелгән хужалыҡ [illegible] 1950 йылдың көҙөндә [illegible] һәм «Ағиҙел» колхоздары берләште һәм уға К. Маркс исеме бирелде. Эреләтелгән колхозда быйыл эш күләме бик ҙур буласаҡ. Быйыл яҙ беҙ 16 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ултыртасаҡбыҙ. Был былтыр ултыртылғандан ике тапҡырға күберәк тигән һүҙ. Был планды беҙ тулыһынса үтәйәсәкбеҙ. Беҙҙең үҙебеҙҙә ултыртыу материалдары етештерелә. 5 гектар майҙанда питомнигебеҙ бар. Быйыл ул тағы ҙурайтыла.

Ә. Сафиуллин,

Дүртөйлө районы Карл Маркс исемендәге колхоздың баҫыу һаҡлаусы урман полосалары үҫтереү бригадаһы бригадиры.

Академик Лысенко методы буйынса

Күгәрсен районы колхоздары баҫыу һаҡлаусы урман полосалары үҫтереү буйынса ҙур ғына эштәр башҡарҙылар. Алдынғы ауыл хужалығы артелдәренән Ленин һәм Сталин исемендәге колхоз члендары ҡоролоҡҡа ҡаршы көрәш сараларының государство планын 1952 йылда тулыһынса тормошҡа ашырыу өсөн көрәшәләр.

Сталин исемендәге колхозда хәҙер 42 гектар майҙанда урман полосалары үҫтерелә. Унда ултыртылған үҫентеләрҙең үҫешләнеүе 97 — 98 процентҡа етә. Ағастар 27 — 30 сантиметр тәрәнлегендә һөрөлгән ҡара пар еренә ултыртылды. Бынан тыш үҫентеләр дүрт тапҡыр уталды. Урман полосаларын тәрбиәләүҙә колхоздың махсус бригадаһы эшләй. 18 кешенән торған был бригада менән тәжрибәле колхозсы иптәш Хәлитов етәкселек итә.

Иптәш Хәлитов бригадаһы быйыл яҙ ағас ултыртыуға өлгөлө әҙерләнде. Колхоздың питомнигында 800 мең самаһы үҫенте үҫтерелде. 1500 килограмм имән сәтләүегенә академик Лысенко методы буйынса махсус соҡорҙа һаҡланды. Бригада бөтә кәрәк эш ҡоралдары менән тәьмин ителде. Ҡыш бригада члендары ағас ултыртыу техникаһының нигеҙҙәрен өйрәнделәр.

Колхоз правлениеһы яҙ ағас ултыртыу эштәренең планын төҙөнө. Унда ҡаралғанынса, быйыл имән академик Лысенко методы буйынса ояла ултыртыла. 15 гектар майҙанда ағас ултыртыу эше 5—6 көн эсендә тамамланырға тейешле. Был майҙанда бригада члендарының көсө менән ҡар һыуы тотолдо.

Ленин исемендәге колхозда ла ағас ултыртыуға яҡшы әҙерләнделәр. Колхозсы Яҡсанов етәкселегендәге бригада ағас ултыртыу өсөн тупраҡ әҙерләү эшенә башланы. Баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын ултыртыу һәм өлгөлө үҫтереү эштәрен үткәреү буйынса был ике колхоздың бригадалары үҙ-ара ярышып эшләйҙәр.

Быйыл яҙ район колхоздарында 270 гектар майҙанда урман полосалары ултыртыласаҡ.

Г. Денисенко,

Күгәрсен районы ауыл хужалығы бүлегенең өлкән агролесомелиораторы.

Колхоздың емеш-еләк баҡсаһы киңәйтелә

Беҙҙең Башҡортостан шарттарында һәр бер колхозда емеш-еләк баҡсаһы булдырырға һәм унан юғары урожай алырға мөмкин. Ләкин баҡса культураларын үҫтереүгә күп кенә колхоздарҙа тейешле иғтибар бирелмәй әле. Шул арҡала бындай колхоздар баҡсасылыҡтан килә торған өҫтәмә доходтан мәхрүм булып торалар.

Беҙҙең колхоз емеш-еләк баҡсаһын үҫтереүгә ҙур иғтибар бирә. Мин был эш менән 1931 йылдан бирле шөғөлләнәм. Тәүге йылдарҙа баҡсасылыҡта мин яңғыҙ ғына эшләнем, ә һуңғы йылдарҙа махсус бригада ойошторолдо.

Быйыл февраль айында «Яңы йорт» һәм «Ҡыяулыҡ» колхоздары берләште. Эреләтелгән колхоздың баҡсасылыҡ бригадаһына етәкселек эше миңә тапшырылды.

Беҙҙең колхоз баҡсаһы Яңыс ауылы янында, Ҡыяулыҡ йылғаһы ярында урынлашҡан. Баҡсабыҙҙа 2,3 гектар алма ағастары, 2,5 гектар ер еләктәре, 2,5 гектар ҡурай еләктәре һәм башҡалар үҫтерелә. Шулай уҡ 1,5 гектар майҙанда питомнигебеҙ бар.

1950 йылда емеш-еләк баҡсаһынан 26 мең һум доход алынды. Ер еләгенең һәр гектарынан 12-шәр центнер урожай алынды.

Быйыл бригада колхозға 40 мең һум доход килтерергә һүҙ бирҙе.

Баҡса майҙаны быйыл киңәйтелә. 1951 йылда яңынан бер гектар крыжовник, 2 гектар алма, 0,5 гектар ҡурай еләге, 0,5 гектар ер еләге ултыртыла. 10 мең төп алма ағасы ашландырыла. Шулай уҡ быйыл виноград үҫентеләре лә ултыртыласаҡ.

Ф. Камалов,

Маҡар районы Киров исемендәге колхоздың емеш-еләк баҡсаһы бригадиры.

Баҫыу эштәре көндәлеге

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ УҢЫШЛЫ БАРА

Асҡар. (Телефон аша). Әбйәлил районында быйыл яҙ үткән йылға ҡарағанда иртәрәк килде. Баҫыуҙар ҡарҙан асылыу менән районның алда барған колхоздары баҫыуға сыҡтылар. Районда баҫыу эштәрен беренсе булып, «Путь к коммунизму», Ленин, Сталин һәм Шәймөрәтов исемендәге колхоздар башлап ебәрҙеләр. Был колхоздарҙа беренсе көндәрҙә үк баҫыу эштәре ҡыҙыу темп алды. «Путь к коммунизму» колхозы 1000 гектар, Ленин һәм Сталин исемендәге колхоздар 900-әр гектар, Шәймөрәтов исемендәге колхоз 535 гектар майҙанда тунға һөрөлгән ерҙәрҙе тырматтылар. Районда 453 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды. Колхоздарҙа баҫыуҙарға урындағы ашламалар сығаралар. Тиҙ һуңғы 5 көн эсендә генә 10 тонна тиреҫ, 2740 центнер көл, 200 центнер көл тиҙәге сығарылды. Айырым колхоздар өлгөргән участкаларҙы һайлап һөрә башланылар.

Ө. Йәғәфәров.

* * *

Шишмә МТС-ы механизаторҙары 1951 йылда юғары урожай өсөн көрәште киң йәйелдерҙеләр. Тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар яҡшы сифатлы итеп ремонтландылар. Хәҙер бөтә тракторҙар ҙа колхоздарға ебәрелделәр.

МТС коллективы Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бувеевтең патриотик башланғысына ҡушылып, 15 ат көсөнә һәр бер тракторға 700 гектар ер эшкәртергә, һәр бер гектар ерҙе эшкәртеүҙең үҙенә төшөү хаҡын 1 һумға кәметергә, 10 процент яғыулыҡ материалдарына, 40 мең һумлыҡ ремонт материалдарына экономия яһарға, бөтә машиналарҙы ла социалистик һаҡлыҡҡа алырға һәм үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан 15-әр центнер урожай үҫтереп алыуға һүҙ бирҙеләр. Үткән йыл «С—80» тракторы менән 2300 гектар майҙанда ер эшкәртеүсе Нәзәһәт Ниғмәтуллина быйыл Ленин исемендәге колхозды хеҙмәтләндерәсәк. Ул быйыл «С—80» тракторы менән 3 мең гектар ер эшкәртергә, бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 100-әр бот урожай үҫтерергә йөкләмә алды.

МТС механизаторҙары бөтә тәр трактор эштәрен тиҙ яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн Ново-Троицк МТС-ы механизаторҙарын социалистик ярышҡа саҡырҙылар.

Хәҙер ҡайһы бер трактор бригадалары дым һаҡлап ҡалыу маҡсатында өлгөргән участкаларҙы һайлап тырматыу эштәренә башланылар.

М. Ғәмбәров,
С. Васильев.

* * *

Миәкә. Районның колхоздары тупраҡтағы дым запастарын туплау буйынса бөтә сараларҙы күрәләр. Ворошилов исемендәге ауыл хужалығы артелендә бер нисә көн эсендә 320 гектар майҙанда, Сталин исемендәге колхозда 200 гектар һәм «Октябрь» колхозында 220 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тоттолар. Район буйынса 4780 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо.

«Комсомолец» колхозы урындағы һәм минераль ашламалар менән 150 гектар, «Урожай» колхозы 80 гектар ужымды өҫтәмә аҙыҡландырҙы. Район буйынса 1530 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Ғ. Ғайнетдинова.

Иптәш А. П. Тяжеваға Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән деятеле тигән почетлы исем биреү һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының почет грамотаһы менән наградлау тураһында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының УКАЗЫ

Көньяҡ Урал геологоуправлениеһы геология хеҙмәтенең III ранглы директоры, геология-минералогия фәндәре кандидаты иптәш Александра Павловна **Тяжеваға**, тыуыуына 50 йыл тулыу һәм Башҡортостанда геология өлкәһендә уңышлы эшмәкәрлегенә 23 йыл тулыу айҡанлы Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән деятеле тигән почетлы исем бирергә һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының почет грамотаһы менән наградларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателенең Урынбаҫары **А. ДЕНИСОВ.**

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретарының вазифаларын үтәүсе **И. ИӘРКӘЕВ.**

Өфө ҡалаһы,
13 апрель, 1951 йыл.

ТЫНЫСЛЫҠТЫҢ ХАЛЫҠ-АРА СТАЛИНСЕ ПРЕМИЯЛАРЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Фредерик ЖОЛИО-КЮРИ,
Коллеж де Франс профессоры, Франция фәндәр Академияһы члены.

Сун ЦЗИН-ЛИН,
Ҡытай халыҡ ярҙамы ассоциацияһы председателе.



Хьюлетт ДЖОНСОН,
Кентербери соборының (Англия) настоятеле.

Эжени КОТТОН,
Францияның төньяғында Эколь Нормальдың (Юғары нормаль мәктәп) почетлы директоры.

Артур МОУЛТОН,
элекке протестант епископ (АҠШ).

Пак ДЕН АЙ,
Корея Демократик ҡатын-ҡыҙҙар союзы председателе.



Эриберто ХАРА,
элекке министр (Мексика).

„ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын“ өйрәнеүселәргә ярҙамға

Иптәш Сталиндең „Советтәр Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында“ тигән китабы

Иптәш Сталиндең «Советтәр Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында» тигән китабы — ҙур тарихи әһәмиәттәге теоретик хеҙмәт ул. Ул марксизм-ленинизм хазинаһына яңы күренекле вклад булып тора. Был китап «ВКП(б) тарихы ҡыҫҡаса курсының» бер главаһын — Бөйөк Ватан һуғышын сағылдырыусы главаһын тәшкил итә.

Иптәш Сталиндең китабы уның 1941—1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы телмәрҙәренең һәм докладтарының йыйынтығы булып тора.

* * *

1941 йылдың 22 июнендә Гитлер Германияһы беҙҙең Тыуған илебеҙгә йыртҡыстарса һөжүм итте. Гитлерселәр Советтәр Союзына ҡаршы һуғышта «Барбаросс планы» тип аталған стратегик пландарын тормошҡа ашырыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙылар. 1940 йылда уҡ эшләнгән был план «йәшен тиҙлегендәге һуғышҡа» иҫәпләнгән булған.

Гитлер Германияһы һәм уның вассалдары Советтәр Союзына ҡаршы 170 дивизия ташланылар. Германияның һәм Көнбайыш Европалағы оккупацияланған илдәр хәрби техникаһының бөтә ҡеүәте Ҡыҙыл Армияға ҡаршы ташланды.

Совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышы башланды. Һуғыштың беренсе көндәренән үк иптәш Сталин империалистарҙың ысын уйҙарын асып бирҙе һәм фашистик Германия һуғышының империалистик характерын күрһәтте. Иптәш Сталин беҙҙең Тыуған илебеҙгә килгән ҙур ҡурҡыныс тураһында беҙҙең халҡыбыҙға бөтә дәһшәтле хәҡиҡәтте әйтте. Немец-фашист ҡоллоҡҡа төшөрөүселәргә ҡаршы көрәштә, тине ул, эш «...СССР халыҡтарының йәшәүе йәки бөтөүе тураһында, Советтәр Союзы халыҡтары азат халыҡтар булырҙармы йәки ҡоллоҡҡа төшөрҙәрме — шул турала бара» (Сталин. «Советтәр Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында», 13-сө бит).

Иптәш Сталин үҙенең 1941 йылдың 3 июлендә радио аша яһаған сығышында совет халҡын яуыз дошманға ҡаршы изге һуғышҡа саҡырҙы. Уның фронт ихтыяжларын хеҙмәтләндереү өсөн Совет государствоһын үҙгәртеп төҙөргә, СССР халыҡтарын берҙәм боевой лагерға ойоштороға, тигән саҡырыуҙары айырыуса көслө яңғыранылар. Ул һиҙгерлекте бөтә яҡлап күтәрергә, совет кешеләре хуш күңеллелекте, тәмһеҙлекте ташлаһындар, ә үҙҙәренең бөтә ғүмерен һәм эшмәкәрлеген дошманды тар-мар итеү эшенә буйһондорһондар, тип саҡырҙы.

Марксистик-ленинсы аңлап белеү методы нигеҙендә иптәш Сталин халыҡ-ара аренала көрәшеүсе көстәрҙең мөнәсәбәтен, уларҙың потенциаль мөмкинлектәрен билдәләне һәм фашистик Германияның еңеләсәге ҡотолғоһоҙлоғон алдан күреп әйтте. Фәнни алдан күреүсәнлектең бик ҙур көсөнә эйә булып, ул, беҙҙең үҙ Ватаныбыҙҙың азатлығы өсөн һуғышыбыҙ Европа һәм Америка халыҡтарының көрәше менән ҡушыласаҡ һәм, Наполеон һәм Вильгельм армиялары ҡыйратылған кеүек үк, Гитлер армияһы ла ҡыйратыласаҡ, тине.

Иптәш Сталин, совет халҡын изге, азатлыҡ һуғышына саҡырып, үҙенең Ҡыҙыл Армия парадында 1941 йылдың 7 ноябрендә һөйләгән телмәрендә былай тине:

«Был һуғышта һеҙҙе бөйөк ата-бабаларыбыҙҙың — Александр Невский, Дмитрий Донской, Кузьма Минин, Дмитрий Пожарский, Александр Суворов, Михаил Кутузовтарҙың батырлыҡ өлгөләре рухландырһын! Һеҙҙе бөйөк Лениндең еңеүле байрағы рухландырһын!» (Шунда уҡ, 40-сы бит).

* * *

Иптәш Сталиндең саҡырыуы буйынса СССР-ҙың бөтә халыҡтары Тыуған илде яҡлауға күтәрелделәр.

1941 йылдың көҙөндә беҙҙең Тыуған илебеҙ өҫтөнә килеп баҫҡан ҡурҡыныс көсәйҙе. Гитлерселәр 35 дивизияларын Мәскәү йүнәлешенә туплаһылар һәм беҙҙең башҡалабыҙға ҡурҡыныс тыуҙырҙылар. Гитлер Мәскәүгә инергә һәм 7 ноябрҙә Ҡыҙыл Майҙанда үҙенең «еңеүсе» ғәскәрҙәренең парадын ҡабул итергә йыйына ине. Сит ил матбуғаты Советтәр Союзының көндәре иҫәпле булыуы тураһында шаулай ине.

Тыуған илебеҙ өсөн ауыр булған был көндәрҙә бөтә донъяға бөйөк Сталиндең тыныс һәм ышаныслы тауышы яңғыраны. Иптәш Сталин үҙенең 1941 йылдың 6 ноябрендә Мәскәүҙә тантаналы ултырышта һөйләгән тарихи телмәрендә ныҡлы логика менән дошмандың уйҙарының ҡотолғоһоҙ емереләсәген асып бирҙе һәм фашистарҙың «йәшен тиҙлегендәге һуғыш» планы емерелде, дошмандың көсө йомшарҙы, ә Советтәр Союзының көстәре әҙләкһеҙ үҫәләр, уның резервтары әле яңы ҡуҙғатыла башланы, тип күрһәтте. Гитлер армияһының тар-мар ителәсәген иптәш Сталин гениаль рәүештә алдан күреп әйтте һәм беҙҙең изге эшебеҙҙең еңәсәгенә ышаныс тыуҙырҙы.

* * *

Немецтарҙың Октябрь һөжүме емерелде. Ләкин гитлерселәр, шул ҡатырғыс уңышҡа ирешеү, армияларын һәм халыҡтарын иҫерең хәлдә, ә үҙҙәренең вассалдарын буйһонған хәлдә тотоу өсөн 16 ноябрҙә Мәскәүгә яңы һөжүм башланылар, был юлы 51 дивизия йүнәлтелде.

Ләкин 1941 йылдың ноябрендә обстановка тамырынан алып үҙгәрҙе. Немец ғәскәрҙәре үҙ базаларынан бик алыҫ киттеләр, уларҙың коммуникациялары оҙайҙы һәм был хәл һөжүм итеү өсөн уларҙың йомшаҡ урыны булып әүерелде, Совет партизандары, быҙан файҙаланып, дошманға һиҙелерлек удар яһай башланылар. Немецтар Мәскәүгә һөжүмгә бөтә көстәрен ташланылар, ә совет командованиеһы үҙенең боевой әҫтәләмәләрен әҙләкһеҙ тупланы.

Обстановканың үҙгәреүе Ҡыҙыл Армияға хәл иткес контр-һөжүмгә күсергә һәм немецтарҙы Мәскәү янында тар-мар итә башларға мөмкинлек бирҙе. Иптәш Сталиндең приказы буйынса 1941 йылдың 6 декабрендә совет ғәскәрҙәренең грандиоз һөжүме башланды. Был һөжүмдең 40 көнө эсендә немецтәр үлтерелгәндәр һәм яраланғандар менән генә 300 мең һалдат һәм офицер юғалттылар. Был — икенсе бөтә донъя һуғышы башланғандан бирле немецтарҙың беренсе ҙур еңелеүе ине.

Ҡыҙыл Армия Мәскәү аны яландарында немец-фашист армияһының «еңелмәҫлеге» тураһында әкиәтте келен күккә осорҙо һәм тамам юҡҡа сығарҙы. Ҡыҙыл Армия дошмандың ваҡытлы өҫтөнлектәрен бөтәрҙе.

«Хәҙер һуғыштың яҙмышы, — тине иптәш Сталин, — ҡапыллыҡ моменте кеүек осраҡлы момент менән түгел, ә һәр ваҡыт эш итеүсе факторҙар менән: тылдың ныҡлығы менән, армияның мораль рухы менән, дивизияларҙың һаны һәм сифаты менән, армияның ҡоралланышы менән, армиялағы начальниктар составының ойоштороусылыҡ булдыҡлылығы менән хәл ителәсәк» (43-44-се биттәр).

Ҡыҙыл Армия Мәскәү янындағы еңеүҙән һуң, 1941 — 1942 йылдың ҡышында башҡа фронттарҙа ла һөжүмде киң йәйелдереп ебәрҙе. Ҡыҙыл Армия кенәнә— 1942 йылдың 23 февраленә — Мәскәү һәм Тула өлкәләре тулыһынса, Калинин өлкәһенең байтаҡ өлөшө, Ленинград өлкәһенең бер өлөшө азат ителде, Смоленск, Орел өлкәләрен, Ҡырымды, шулай уҡ Украинаның Харьков өлкәһен, Донбассты һәм башҡа өлкәләрҙе азат итеү башланды.

Ләкин немец-фашист илбаҫарҙары, Европала икенсе фронттың булмауынан файҙаланып, яңы хәрби авантюралар әҙерләүҙе дауам иттеләр. Гитлер, көсһеҙләндерелгән дивизияларын тулыландырыу өсөн, «тоталь мобилизация» үткәрҙе, үҙенең вассалдарынан уҡарлаған яңы дивизиялар талап итте һәм Ҡыҙыл Армияға ҡаршы 240 дивизия тупланы.

Фашистарҙың яңы һөжүмдәренең маҡсаты Мәскәүҙе уратып үтеү юлы менән алыуҙан ғибәрәт ине. Улар Волгаға үтеп инергә, башҡаланы Волга һәм Урал тылынан айырырға һәм Мәскәүгә көнсығыштан удар яһарға иҫәп тоттолар. Иптәш Сталин немецтәр планының асылын ваҡытында аңлап алды.

Немецтар башта Воронеж районынан үтеп инергә уйланылар. Совет командованиеһе ҡаршы саралар күрҙе һәм дошмандың планын өҙҙө. Воронеж районында уңышһыҙлыҡҡа осрағандан һуң, гитлерселәр төп удар йүнәлешен үҙгәрттеләр — Волгаға Дондың түбән ағымы аша, Сталинградҡа ынтылдылар.

Кешеләрҙә һәм техникала ғәйәт ҙур юғалтыуҙар хаҡына улар Украинаның көнсығыш өлөшөн алдылар, Кубанға һәм Төньяҡ Кавказға үтеп индиләр һәм Сталинградҡа табан хәрәкәт итә башланылар. Гитлер Сталинград йүнәлешенә бик яҡшы ҡоралланған 36 дивизия ташланы.

Ҡыҙыл Армия, иптәш Сталиндең стратегик планын үтәп, Сталинград янында һәм Кавказ тауы итәктәрендә ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәтте һәм немец командованиеһының планын өҙҙө. Ул ҡаты һуғыштарҙа дошманды көсһеҙләндерҙе, ҡыйыу контр-һөжүмгә күсте һәм Сталинград янында Паулюстең һайлап алынған ғәскәрҙәрен тар-мар итте. Һуғыштың масштабтары буйынса ла, шулай уҡ совет боецтары һәм командирҙары күрһәткән хәрби оҫталыҡ буйынса ла, бөтә донъя тарихында Сталинград операцияһына тиң була алырлыҡ операция юҡ.

* * *

Сталинград еңеүенән һуң хәрби хәрәкәттәрҙә инициатива Ҡыҙыл Армия ҡулына күсте. Ҡыҙыл Армия фронттың ғәйәт ҙур һуҙымында — Ленинградтан алып Төньяҡ Кавказға тиклем — дошманды ҡыйратты һәм көнбайышҡа ҡыуҙы. Сталинград операцияһы Бөйөк Ватан һуғышының бөтә барышында тамырынан алып һынылыш булып торҙо. Ул немец-фашист армияһының һәләкәтле батыуын алдан хәбәр итте.

Гитлерселәр ниндәй булһа уңышҡа ирешеү өсөн бөтә ҡәмәле картаға һалдылар. Яңы «тоталь мобилизация» юлы менән үҙҙәренең совет—немец фронтындағы дивизияларының һанын 257-гә еткерҙеләр, һуғышҡа яңы тип танк — «тигр»ҙарҙы һәм үҙе йөрөй торған пушка — «фердинанд»тарҙы индерҙеләр. Улар Ҡыҙыл Армияға төп ударҙы Курск—Белгород йүнәлешендә яһарға ҡарар иттеләр.

Гитлерселәр Курск янында Ҡыҙыл Армия өсөн «Немец Сталинградын» әҙерләргә уйлағайнылар. Ләкин совет ғәскәрҙәре 12 июлдә хәл иткес һөжүмгә күсте һәм Гитлер ғәскәрҙәрен тар-мар итте.

Иптәш Сталин, совет ғәскәрҙәренең Курск янындағы операцияларына анализ яһап, былай тине: «Сталинград янындағы һуғыш немец-фашист армияһының көнө бөтөүен алдан күрһәткән булһа, Курск янындағы һуғыш уны һәләкәт алдына килтереп ҡуйҙы» (114-се бит).

Ҡыҙыл Армияның Курск янындағы еңеүе һөҙөмтәһендә совет ғәскәрҙәре һөжүменең яңы фазаһы асылды, Көнбайыш [illegible] алып Кубанға тиклем фронтта һөжүм башланды. Ҡыҙыл Армия Донбассты азат итте, дошманды Днепр аръяғына ырғытып ташланы һәм 6 ноябрҙә Украинаның башҡалаһы — Киевты азат итте.

Иптәш Сталин, бер йыллыҡ һуғышҡа йомғаҡ яһап, уны һуғыш барышында тамырынан алып һынылыш йылы, тип баһаланы. Ҡыҙыл Армия был йылда ҙур йәйге һөжүмде тормошҡа ашырҙы, фашист армияһының тәжрибәле кадрҙарын ҡыйратты.

Советтәр Союзының ҡеүәте, Совет Ҡораллы Көстәренең һәм уның полководецтарының боевой һәләтлеге үҫте. Совет полководецтары сталинсе хәрби стратегияны һәм тактиканы тамам үҙләштерҙеләр һәм уны оҫта рәүештә немецтарҙың зәғиф стратегияһына һәм шаблон тактикаһына ҡаршы ҡуйҙылар.

Үткән йыл тағы ла шуның өсөн һынылыш йылы булды: тыл кешеләренең батыр хеҙмәте арҡаһында боевой техника етештереү ҡырҡа күтәрелде, илдең хәрби хужалығы ныҡыны.

Верховный Главнокомандующий иптәш Сталин үҙенең 1943 йыл 7 ноябрь приказында Ҡыҙыл Армия алдына совет ерен немец илбаҫарҙарынан тулыһынса азат итеү бурысын ҡуйҙы. Был бурыс 1944 йылда ғүзәл рәүештә үтәлде. Ҡыҙыл Армия 1944 йылда бөйөк һөжүмде тормошҡа ашырҙы. Ҡеүәтле ун удар һөҙөмтәһендә 1944 йыл аҙағына совет иле немец-фашист илбаҫарҙарынан тулыһынса азат ителде. Ҡыҙыл Армияның ударҙары аҫтында фашистик Германияның союзниктары — Финляндия, Румыния, Венгрия, Италия гитлерсе коалициянан сығырға мәжбүр булдылар, ярашыу төҙөүҙе һоранылар һәм Германияға һуғыш иғлан иттеләр.

Ҡыҙыл Армия Болгарияны, Румынияны, Югославияны, Албанияны, ә 1945 йылда Польша һәм Чехословакияны немец-фашист варварҙарынан таҙартырға һәм был илдәрҙең халыҡтарына халыҡ-демократик ҡоролош урынлаштырырға ярҙам итте.

Гитлерсе Германия бер үҙе торып ҡалды, уның экономикаһы тарҡалды, ә уның армияһының һәм халҡының мораль рухы бөтөнләй төштө.

Иптәш Сталин үҙенең китабында Ҡыҙыл Армияның был ун ҡеүәтле ударҙарының һәр береһенә тәрән һәм тулы анализ бирҙе.

* * *

Билдәле булыуынса, Англия һәм АҠШ гитлерсе Германия менән Советтәр Союзының бергә-бер һуғышта тамам көсһеҙләнеүен көттөләр, шунан һуң ғына аренаға сығырға һәм бөтә донъяға үҙ ихтыярҙарын диктовать итергә иҫәп тоттолар. Шуға күрә лә улар Европала икенсе фронтты асманылар. Хәҙерге һуғыш тоҡандырыусы, Англияның ул ваҡыттағы премьер-министры Черчилль Европала икенсе фронт асыуға ныҡышмалы ҡаршы торҙо. Европала икенсе фронт бары тик 1944 йылдың июнендә генә асылды.

Европала икенсе фронт асылһа ла, гитлерселәр үҙҙәренең төп көстәрен немец-совет фронтында тоттолар. Төп фашист ғәскәрҙәре менән элеккесә Ҡыҙыл Армия һуғышты. Гитлерселәр ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәтеүҙе дауам иттеләр. Шул уҡ ваҡытта улар Англия һәм АҠШ-тың Германия менән союз төҙөүгә һәм Советтәр Союзына ҡаршы сығыуға ризалығын алырға бөтә көстәре менән тырыштылар. Ләкин уларҙың был ынтылыштары уңышһыҙ бөттө. Англия һәм АҠШ-тың фашистарға нәфрәт менән ҡараусы халыҡтары гитлерселәр менән союз төҙөүҙе, ярашыуҙы түгел, ә уларҙы тулыһынса ҡыйратыуҙы талап иттеләр, империалистарҙың пландарын өҙҙөләр.

Ҡыҙыл Армия алдына фашист йыртҡысты үҙ өңөндә туҡмап үлтереү бурысы килеп баҫты. Совет командованиеһе, сталинсе стратегик планды тормошҡа ашырып, был бурысты бик оҫта үтәне.

Ҡыҙыл Армия Германия территорияһындағы уңышлы операцияларҙа гитлерсе полчищеларҙы тар-мар итте. 1945 йылдың 2 майында Берлин алынды. 8 майҙа герман командованиеһе бер һүҙһеҙ капитуляция яһау тураһындағы актҡа ҡул ҡуйҙы. Фашистик Германия йәшәүҙән туҡтаны.

Ҡыҙыл Армия герман фашизмын еңде, шуның менән немец халҡы алдында үҙенең тарихи миссияһын үтәне. Иптәш Сталин һуғыш башында уҡ әле, Ҡыҙыл Армия үҙ алдына немец халҡын ҡырып бөтөрөү һәм Германия государствоһын юҡ итеү кеүек алйот маҡсат ҡуя алмай, тип әйткәйне.

«... Гитлер кликаһын герман халҡы менән, герман государствоһы менән бер итеп ҡарау көлкө булыр ине. Тарих тәжрибәһе шуны күрһәтә: гитлерҙар киләләр ҙә китәләр, ә герман халҡы, ә герман государствоһы — ҡала» (46-сы бит).

Хәҙерге ваҡытта Англия-Америка империалистары — яңы һуғыш тоҡандырыусылар, Потсдам килешеүен аяҡ аҫтына һалып тапап, Германияны өлөштәргә бүлгеләнеләр, Аденауэрҙың реакцион марионетка хөкүмәте ярҙамында немец халҡының азатлығын, демократияһын быуалар һәм немецтарҙы киләсәк һуғышта «пушка ите» итеп файҙаланыуға ынтылалар.

Көнсығыш Германияла, киреһенсә, халыҡ ысын-ысынлап демократик азатлыҡҡа һәм бойондороҡһоҙлоҡҡа иреште, Германия демократик республикаһын төҙөне, империалистар менән бәйләнеште бөтөнләйгә өҙә һәм берҙәм демократик герман государствоһын төҙөү өсөн көрәшә.

* * *

Фашистик Германияның еңелеүе һөҙөмтәһендә агрессияның көнбайыштағы усағы бөтөрөлдө, ә япон империалистары тарафынан еселгән Алыҫ Көнсығыштағы һуғыш усағы бар ине әле.

Япон империалистары оҙаҡ ваҡыт буйына Советтәр Союзына ҡарата баҫып алыу пландары эшләнеләр. Япон военщинаһы бер нисә тапҡыр совет ерҙәрен баҫып алырға маташты. Икенсе бөтә донъя һуғышы йылдарында япондар тағы ла активләшә башланылар. Улар Маньчжурия-Совет сигендә миллиондан артыҡ һалдаттан торған Квантун армияһын тупланылар, бактериологик һуғыш әҙерләнеләр һәм Советтәр Союзына һөжүм итеү өсөн уңайлы момент көтөп торҙолар.

СССР-ға һөжүм итеү өсөн улар 1942 йылдың июлендә Сталинградтың еңелеүен көттөләр. Сталинград бирелмәне, Япондар сығыш яһауҙан туҡталып ҡалдылар. Ләкин Япония хатта Германия капитуляция яһағандан һуң да Советтәр Союзына ҡаршы дошманлыҡ эшмәкәрлеген туҡтатманы.

Был хәл Совет хөкүмәтен Япония менән нейтралитет тураһындағы пактты боҙорға мәжбүр итте. Беҙҙең Тыуған илебеҙгә көнсығыштан һөжүм итеү ҡурҡынысына бынан һуң түҙеп тороу мөмкин түгел ине. Үҙенең союзниклыҡ бурысына тоғро булған Советтәр Союзы АҠШ, Англия һәм Ҡытайҙың 1945 йыл 26 июлдәге Потсдам декларацияһына ҡушылыуы һәм 9 августан алып Япония менән һуғыш хәлендә тороуы тураһында белдерҙе.

Совет ғәскәрҙәре, сталинсе стратегик планды үтәп, япондарға емергес удар яһанылар, Квантун армияһын тар-мар иттеләр. Япония капитуляция яһаны.

Иптәш Сталин, Японияның бер һүҙһеҙ капитуляция яһау уңайы менән халыҡҡа мөрәжәғәтендә, оҙаҡ йылдар буйына алып барылған хәрби провокация һәм интригалар өсөн япон баҫып алыусыларына тейешле талап ҡуйыр көн килеп етте, тип белдерҙе.

Японияны еңеү был ҡара тапты бөтөрөүгә килтерҙе. Сахалин утрауы һәм Курильский утрауҙары бөтөнләйгә совет илебе булып әүерелделәр. Японияны еңеү менән СССР Корея һәм Ҡытай халыҡтарына ҡарата ғәйәт ҙур азатлыҡ миссияһын үтәне. Төньяҡ Корея халыҡтары азатлыҡ, бойондороҡһоҙлоҡ алдылар, халыҡ-демократик республикаһын төҙөнөләр һәм хәҙер берҙәм Корея государствоһын төҙөү өсөн хыянатсы Ли Сын Ман кликаһына һәм Америка империалистарына ҡаршы героик азатлыҡ көрәше алып баралар. Героик ҡытай халҡы империалистик-колонизаторҙар иҙеүенән ҡотолдо, гоминдансыларҙың реакцион кликаһын тар-мар итте һәм Ҡытай халыҡ республикаһын төҙөне.

Иптәш Сталин «Советтәр Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында» тигән китабында, донъя агрессияһының усаҡтары — көнбайышта Германия, көнсығышта Япония — ҡыйратылдылар, тип белдерҙе.

«Совет халҡы,—тине иптәш Сталин,— еңеүгә ирешеү өсөн көсөн һәм хеҙмәтен ҡыҙғанманы. Беҙ ауыр йылдар кисерҙек. Ләкин беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ хәҙер: беҙ еңдек, — тип әйтә ала. Ошо көндән алып беҙ Ватаныбыҙ көнбайышта немецтәр абырылыуы ҡурҡынысынан һәм көнсығышта япондар абырылыуы ҡурҡынысынан ҡотҡарылды, тип иҫәпләй алабыҙ» (206-сы бит).

Иптәш Сталин үҙенең хеҙмәтендә дошманды тар-мар итеүҙең гениаль стратегик планын биреп кенә ҡалманы, бәлки һуғыштан һуңғы осорҙа СССР-ҙың оҙаҡ тыныслыҡҡа, халыҡтар араһында хеҙмәттәшлеккә иҫәпләнгән тышҡы политикаһының нигеҙҙәрен дә эшләне.

* * *

Беҙҙең илебеҙҙең бөйөк, бәтәһен дә еңеүсе көсө тураһындағы фекер иптәш Сталиндең бөтә китабы буйлап ҡыҙыл еп булып һуҙылып килә. Батша Россияһының беренсе бөтә донъя империалистик һуғышта еңелеүенең сәбәбе — уның политик, экономик, культура һәм хәрби яҡтан артталығында ине.

Бөйөк Ватан һуғышы совет общество ҡоролошоноң совет булмаған теләһә ниндәй общество ҡоролошонан өҫтөнлөгөн, обществоны ойоштороуҙың иң яҡшы формаһы булып тороуын күрһәтте.

Дошманды еңеүгә беҙҙең Совет Государствоһы Ҡоролошо килтерҙе. СССР тарихта беренсе тапҡыр күп милләтле государство төҙөне, бында халыҡтарҙың сталинсе дуҫлығы сәскә атты. Бөйөк рус халҡы етәкселегендә СССР-ҙың бөтә халыҡтары беҙҙең Ватаныбыҙҙы күкрәктәре менән яҡланылар.

Советтәр Союзы шуның өсөн еңде: Ватан һуғышында совет халҡының етәксе һәм йүнәлеш биреүсе көсө Ленин — Сталин партияһы булды. Гитлер Германияһын һәм империалистик Японияны бөйөк тарихи еңеүгә беҙҙе хәҙерге заманның бөйөк стратегы һәм полководецы, аҡыллы государство эшмәкәре, учитель һәм юлбашсы иптәш Сталин алып килде. Уның исеме кешелек тарихында мәңге һүнмәҫ йондоҙ булып балҡып торасаҡ.

Д. Фәхләев.

ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты лекторы.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Илгә күберәк металл биреү өсөн көрәш— Белорет коммунистарының намыҫ эше

Республикабыҙҙың металлургтары ҡалаһы — Белорет коммунистарының VI конференцияһы булып үтте. Партияның ҡала комитеты секретары иптәш **Григорьев** ВКП(б) ҡала комитетының эше тураһында отчет доклады менән сығыш яһаны.

Иптәш Григорьев докладында ҡала партия ойошмаһы үҙенең конференцияһына идея яғынан үҫкән, ойошоу яғынан ныҡыған хәлдә, ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм иптәш Сталин тирәһенә тығыҙ тупланған хәлдә килеүен әйтте. Унан ары ул ҡала партия ойошмаһының отчет осоронда башҡарған ғәйәт ҙур эштәренә туҡталды. Ҡаланың промышленносы уңышлы эшләне. Промышленность продукцияһын эшләп сығарыу һуғышҡа тиклемге 1940 йыл менән сағыштырғанда күп кенә артты.

Ҡаланың төп предприятиеларының байтағы ла үҙҙәренең биш йыллыҡ пландарын үтәнеләр. Яңы, тағы ла сифатлыраҡ маркалы ҡорос, прокат һәм башҡа күп төрлө продукция етештереүҙе үҙләштереү һәм уларҙы эшләп сығарыу буйынса, күп хеҙмәт талап иткән процестарҙы механизациялау, юғары-прогрессив, техник-экономик нормаларҙы үҙләштереү буйынса металлургтар күп кенә эштәр башҡарҙылар.

Ҡала партия ойошмаһы социалистик ярышты йәйелдереү буйынса хеҙмәтсәндәр араһында ҙур ғына эш алып барҙы. Шул арҡала эшселәрҙең 94 процентенең ярышта ҡатнашыуына өлгәшелде. 400 бригада отлично сифатлы ғына продукция етештереү өсөн ярыша.

Докладсы һәм фекер алышыуҙа ҡатнашыусы делегаттар, промышленносте тағы ла йылдамыраҡ күтәреү өсөн булған мөмкинлектәрҙең шулай ҙа әле тулыһынса файҙаланып еткерелмәүен әйттеләр. Металлургтар быйылғы йылдың беренсе кварталында государство ҡаршында бик ҙур бурыслы булып ҡалдылар. Квартал планы үтәлмәне.

Партия ҡала комитетының промышленноска етәкселек кимәленең түбән булыуы промышленность предприятиелары эшендә етешһеҙлектәргә юл ҡуйылыуы сәбәптәренең береһе булып тора. Ҡала комитеты һәм уның секретарҙары, тинеләр делегаттар үҙҙәренең сығыштарында, предприятиеларҙың тормошон бик насар беләләр, производствоның экономикаһына инмәйҙәр, эшселәр араһында бик аҙ булалар.

Ойоштороу-партия эштәре өлкәһендә лә ҙур етешһеҙлектәр бар. Быға миҫал итеп ҡорос-сыбыҡ заводы партия ойошмаһының эшен алырға мөмкин. Унда партия ойошмаһының отчет-һайлау йыйылышы идея яғынан бик түбән кимәлдә үтте. Партия ойошмаһының элекке секретары иптәш Дрызлов инженер-техник работниктарға ҡарата дөрөҫ түгел мөнәсәбәттә булған, тәнҡитте ҡыҫырға ынтылған, коммунистарҙың кәңәштәрен тыңламаған. Шуға күрә коммунистар үҙҙәренең отчет-һайлау йыйылыштарында уны һайламанылар.

ВКП(б) ҡала комитетының пропагандистарға ярҙамы етерлек түгел. Ҡайһы бер коммунистарҙың үҙ политик белем кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә эшләмәүҙәре, уларҙы тормоштан артта ҡалыуға, үҙҙәренең шәхси хужалыҡтарын үҫтереү юлына баҫыуҙарына, эштә большевистик принципиаллекте юғалтыуҙарына килтергән.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа ҡатнашыусы делегаттар өлгәшелгән ҡайһы бер уңыштарҙы билдәләү менән бергә ҡала комитетының эшмәкәрлегендәге бик ҙур етешһеҙлектәрҙе астылар.

Белорет металлургия комбинатының директоры иптәш **Овчаренко** комбинаттың йылдан-йыл хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрә барыуын, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметә һәм номенклатура заданиеларын үтәй барыуын әйтте. — Шуның менән бер рәттән, — тине ул, — беҙҙең эшебеҙҙә бик ҙур етешһеҙлектәр бар. Коллектив металломды, сырьены һәм материалдарҙы бик күп расходланы, ә беренсе квартал планы үтәлмәне. Был дирекцияның, партия һәм профсоюз ойошмаларының производствоға етәкселекте йомшартыуҙары арҡаһында шулай булды. Завод партия комитеты производство тормошона етерлек инмәй, коллективты производство планын үтәүгә һәм арттырып үтәүгә мобилизовать итеүгә йүнәлтелгән агитацион-массовый эште тейешенсә йәйелдермәй. ВКП(б)-ның ҡала комитеты ла производство мәсьәләләренә иғтибарҙы аҙ бүлә.

Делегаттарҙан **Мясоедов, Дроздов, Духовный** һәм башҡа иптәштәр үҙҙәренең сығыштарында ВКП(б) ҡала комитетының һәм уның промышленность бүлегенең промышленноска етәкселек итеү эштәрендәге серьез етешһеҙлектәре тураһында һөйләнеләр.

— Ҡала комитеты урындағы промышленность предприятиеларының партия ойошмаларына йомшаҡ етәкселек итә,— тине делегат иптәш **Бритов**. — Уларға партия-ойоштороу һәм партия-политик эште яҡшыртыуҙа ярҙамы аҙ күрһәтә. Партия йыйылыштары уларҙа һирәк һәм түбән кимәлдә үткәрелә. Күп кенә коммунистарға партия поручениелары бирелмәгән.

«Магнитострой» тресы төҙөлөш-монтаж управлениеһының партбюро секретары иптәш **Яковлев** партия ҡарарҙарының үтәлешен тикшереүҙең йомшаҡ ҡуйылыуын билдәләне.

— ВКП(б)-ның ҡала комитеты төҙөлөш-монтаж управлениеһының эше тураһында бик яҡшы ҡарарҙар сығарҙы,— тине ул. — Ләкин уларҙың күбеһе үтәлмәй ҡалды. Беҙҙең партия ойошмабыҙ ҙа йыш ҡына үҙенең ҡарарҙарын үтәмәй. Беҙгә күп ваҡытта ҡала комитетының ярҙамы кәрәк була, ә ул ярҙамды ала алғаныбыҙ юҡ.

Партия мәғарифе селтәрендәге етешһеҙлектәр тураһында делегат иптәш **Куловский** былай тине:

— Ҡаладағы политик мәктәптәрҙең күпселеге насар эшләй. Металлургия заводы партия ойошмаһының мәктәп һәм политик түңәрәктәрендә ҡайһы бер занятиеларҙа йөрөш 50 процент кенә була. Коммунистарҙың үҙ аллы уҡыуҙары эшендә лә бик ҙур етешһеҙлектәр бар. Күп кенә коммунистар үҙҙәренең идея-теоретик кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә эшләмәйҙәр.

Комсомолдың ҡала комитеты секретары иптәш **Адауров** ВКП(б) ҡала комитетын һәм уның партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлеген комсомол ойошмаларына йомшаҡ етәкселек итеүе өсөн тәнҡитләне.

— Комсомолдың ҡала комитеты, — тине иптәш Адауров, — партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлегенән һәм уның мөдире иптәш Безубовтан етерлек ярҙам ала алмай. Был бүлек беҙҙең эшкә үҙебеҙ ебәреп торған айлыҡ отчеттар аша ғына етәкселек итә.

Ҡала мәғариф бүлеге мөдире иптәш **Зеркин** мәктәптәрҙәге уҡытыу-тәрбиә эшендә булған етешһеҙлектәр һәм был эште яҡшыртыуға ҡала комитетының етерлек ярҙам итмәүе тураһында һөйләне.

Конференция, эштәге был ҙур етешһеҙлектәрҙең йәшәп килеүенең иң төп сәбәптәренең береһе тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүгә киң юл асып бирелмәүендә, тип билдәләне. Партия профсоюз һәм хужалыҡ ойошмаларының ҡайһы бер етәкселәре ҡала газетаһының тәнҡит материалдарын насар ҡабул итәләр. Газета сигналдары буйынса ҡала прокуроры иптәш Дурасов бер ниндәй ҙә сара күрмәй. Ә ҡала комитеты редакцияны яҡламай, — тине үҙенең сығышында «Белорецкий рабочий» газетаһының редакторы иптәш **Игнатьев**.

Ҡала конференцияһының эшендә ВКП(б)-ның Өлкә Комитеты секретары иптәш Ҡорбанғолов ҡатнашлыҡ итте. Ул ҡала партия ойошмаһы алдында торған бурыстар тураһында сығыш яһаны.

Конференция партия ҡала комитетының эшен артабан яҡшыртырға йүнәлтелгән ҡарар ҡабул итте.

Райкомдың беренсе пленумында **Григорьев, Портнов, Денисова** иптәштәр ВКП(б)-ның ҡала комитеты секретарҙары итеп һайландылар.

„Ҡыҙыл Башҡортостан“ материалдары буйынса

„Юғары талапсанлыҡ—йәш коммунистарҙы тәрбиәләүҙә мөһим шарт“

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 6-сы номерында Салауат районында йәш коммунистарҙы тәрбиәләү эшенең түбән булыуы, уларҙың идея-политик кимәлдәрен һәм производство квалификацияларын күтәреүҙә конкрет етәкселек итәлмәүе, шулай уҡ йәш коммунистар араһында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙең принципиаль юғарылыҡта булмауы һәм башҡа етешһеҙлектәр тураһында материал баҫылып сыҡҡайны.

«Юғары талапсанлыҡ — йәш коммунистарҙы тәрбиәләүҙә мөһим шарт» тигән материал райкомдың бюро ултырышында тикшерелде.

Ошо айҙарҙа бөтә урында ла йәш коммунистарҙың куст йыйылыштары үткәрелде һәм етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, шулай уҡ коммунистар араһында тәрбиә эштәрен яҡшыртыу маҡсатында райком тарафынан конкрет саралар билдәләнгән.

Газетала баҫылмаған материалдар буйынса

Санаторийҙың эшен яҡшыртыуға практик саралар билдәләнде

Йомаатау санаторийында дауаланыусыларҙы хеҙмәтләндереүгә тейешле иғтибар бирелмәүе, гигиена-санитария ҡағиҙәләренең һаҡланмауы, аҙыҡ әйберҙәре түбән сифатлы итеп әҙерләнеүе һәм башҡа төрҙә етешһеҙлектәр булыуы тураһында «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы редакцияһына хат килгәйне. Был хат урында тикшерелеп тулыһынса дөрөҫ, тип табылды.

БАССР Һаулыҡ һаҡлау министерствоһының редакцияға хәбәр итеүенсә, хатта күрһәтелгән факттар Йомаатау санаторийының партия ойошмаһында тикшерелеп, асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса күп кенә саралар билдәләнгән.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

…щественный малсылыҡҡа иғтибар бирмәйҙәр

…районы Красин исемендәге …общественный малсылыҡты ур… иғтибар бирелмәй. Мал …әҙерләү планы үтәлмәүгә тә… …(ы)нда булған мал аҙыҡтары …файҙаланылмай, әрәм-шәрәм …ы ҡуйыла.

…урта хисап менән февраль …2260 центнер мал аҙығы булыр… …ине, ләкин үткәрелгән тикше… …центнер генә аҙыҡ ҡалғанлығын … Был мал аҙыҡтарын һаҡлауға …ә лә иғтибар бирелмәй, урлауға …-шәрәм итеүгә юл ҡуйыла.

…членңарынан Нурисламов һәм …тарын колхоз һаламын …урлауҙары колхоз етәкселәренә яҡ… …ине, ләкин уларға бер ниндәй ҙә …мәй. Колхоз председателе Ғари… …малсылыҡ фермаһы мөдире Шам… …һәм ревизия комиссияһының …Фазылов иптәштәр быға бик …ы итеп кенә ҡарайҙар.

Красин исемендәге колхоз районда әре колхоздарҙан береһе. Ләкин район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Ғабдуллин һәм өлкән зоотехнигы Яруллин иптәштәр был колхозда бик һирәк булалар. Һөҙөмтәлә малсылыҡтың торошо бик насар. Малдарҙың тәүлек буйынса ашамай, эсмәй торған көндәре лә бар. Малсылыҡ фермаһы кадрҙар менән комплектовать ителмәгән. Мәҫәлән, 140 баш һарыҡты иптәш Ғарипова бер үҙе тәрбиәләй. Хатта мал аҙығы ташыусы ла юҡ. Шуға күрә иптәш Ғарипова һарыҡтар тәрбиәләү буйынса талап ителгән эштәрҙе эшләп өлгөрмәй. Малдарҙың көрҙәлектәре түбән, февраль айында ғына 10 һарыҡ үлгән.

Красин исемендәге колхоз районда малсылыҡ буйынса артта ҡалған колхоздарҙың береһе. Колхоз етәкселәренән тиҙ көндә был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөп, колхозды алдынғылар сафына сығарыу талап ителә.

Х. Йосопов.

Ни өсөн механизм файҙаланылмай

…ойошмалары өсөн шлакоблок …тешкән материал булып һаҡа… …стена һалыу өсөн файҙаланалар. …йыш эшләп дә ул үҙен аҡланы. …күп төҙөлөш ойошмалары тор… …ларының стеналарын шлакоблок… …ар.

…монтаж-төҙөләш контораһы ла …блоктар эшләп сығара һәм уларҙы …ә киң ҡуллана. Ләкин шлако… …етештереү өсөн беҙ бик күп физик …көс. Тик цементы аһау ғына бетон …ярҙамында эшләнә. Ҡалған про… …ҡул көсө менән башҡарыла. Ә был …тә лә механизациялаштырырға …бөтә мөмкинлектәр бар. Үткән йыл…

…да уҡ ниҙе контора шлакоблок эшләп сығара торған установка алғайны. Ләкин был яңы механизм, ремонт талап ителеү сәбәпле, бөгөнгә көнгә тиклем файҙаланылмай ултыра.

Беҙ был установканың тиҙерәк ремонтланып, төҙөләш эшендә файҙаланылыуын һорайбыҙ. Уны файҙаланыу шлакоблок етештереүҙе күп арттырасаҡ, продукцияның сифатын яҡшыртасаҡ һәм 2-3 эшсене эштән бушатып, икенсе эшкә күсерергә мөмкинлек тыуҙырасаҡ.

В. Евтеньев,

«Ишембайнефть» тресы монтаж-төҙөләш контораһының шлакоблок цехы бригадиры.

Клубтың эше яҡшыртылһын

…«Правда» колхозы клубы ҙур … Ул таҙа, матур итеп йыһазланды… …Ләкин ойоштороу-массовый эш …ланыштан, был клуб колхозсылар… …культуралы ял итеү талабына яуап … Бында политик һәм фәнни тема… …лекциялар, докладтар сирәк(?)ҡанда …үткәрелә. Мәҫәлән, быйыл клуб… …Март — ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә ҡа… …лекция һәм постановка булды. …ойошторолған художестволы үҙ …түңәрәге насар эшләй. Ком…

сомол ойошмаһы уны йәнләндереү сараһын күрмәй.

Район кинофикация бүлегенең планы буйынса колхоздарҙа айына ес таңҡыр кинокартина күрһәтелергә тейеш. Ләкин уның эште дөрөҫ ойошторлмауы арҡаһында колхозда 18 февралдән бирле кино күрһәтелгәне юҡ.

Колхозсылар культура-массовый эштәрҙең яҡшыртылыуын талап итәләр.

Р. Әхмәтьянов,
Учалы районы.

Яңы китаптар

Ошо көндәрҙә Башҡорт Государство Издательствоһы түбәндәге китаптарҙы баҫып сығарҙы:

А. С. Пушкин, «Капитан ҡыҙы», М. Кәрим тәржемәһе. Күләме 32 бит, тиражы 5.000, хаҡы 50 тин.

А. М. Горький, «Минең университеттарым», Б. Бикбай тәржемәһе. Күләме 158 бит, тиражы 4.000, хаҡы 3 һум 75 тин.

Д. Фурманов, «Чапаев», Ғ. Ниғмәти тәржемәһе. Күләме 311 бит, тиражы 4.000, хаҡы 7 һум 50 тин.

Башҡорт шағирҙарының «Тыныслыҡ өсөн» тигән шиғырҙар йыйынтығы. Күләме 100 бит, тиражы 3750, хаҡы 3 һум.

Кирәй Мәргән, «Нарыш тау итәгендә» — роман. Күләме 256 бит, тиражы 4.000, хаҡы 8 һум.

Ҡадир Даян, «Һайланма әҫәрҙәр». Күләме 304 бит, тиражы 4.000, хаҡы 8 һум 50 тин.

М. Кәрим, «Яҙғы ер». Күләме 45 бит, тиражы 4.000, хаҡы 1 һум 45 тин.

Г. Р. Гайнуллин, «Мөгеҙле эре малдарҙа туберкулез ауырыуы һәм уға ҡаршы көрәш саралары» (рус телендә). Күләме 18 бит, тиражы 4.000, хаҡы 35 тин.

Г. С. Смородин, Ш. М. Фаршатов, «Предплужникле һабандарҙы ҡулланыу тәжрибәһе», күләме 70 бит, тиражы 3.000, хаҡы 1 һум 30 тин.

Республика библколлекторы культура-ағартыу учреждениеләренә даими рәүештә политик, художество һәм техник әҙәбиәт китаптары ебәреп тора.

Һүрәттә: библколлектор работниктары С. Латыпова һәм Е. Сверюгина иптәштәр. Улар библиотекаларға ебәреү өсөн китаптар әҙерләйҙәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

„Совет Башҡортостаны" фильме Тажикстанда

Күптән түгел, Тажикстандың башҡалаһы Сталинабадта «Совет Башҡортостаны» фильме күрһәтелде. Ҡаланың меңәрләгән хеҙмәтсәндәре был фильмде ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм ҡәнәғәтләнеү менән ҡаранылар.

Элекке ваҡытта башҡорт халҡының тормошо, көн-күреше Тажикстанда күрһәтелер, тип бер кем дә уйламағандыр. Тажик хеҙмәтсәндәре был фильмдә башҡорт халҡы культураһының үҫеүен, тормош кимәлдәренең күтәрелеүен бик асыҡ күрҙе.

Ә. Вәлиев.

Пропагандистәр семинары

ВКП(б)-ның Маҡар райкомы партия мәғарифе селтәрендә эшләгән политик мәктәп һәм түңәрәк етәкселәренең семинарҙарын регуляр үткәреп бара. Семинарҙар пропагандистарҙың актив ҡатнашлығында, яҡшы әҙерлек менән үтәләр.

Ошо көндәрҙә булған семинарҙа пропагандистар «Империализм — капитализмдең юғары стадияһы» тигән темаға лекция тыңланылар.

С. Макарский.

Малсылыҡтың тоҡомон яҡшыртыу өсөн

Көйөргәҙе районының йылҡысылыҡ совхозы тоҡомло йылҡы малы үрсетеү менән бергә, мөгеҙле эре малдарҙың тоҡомон яҡшыртыу буйынса ла ҙур хеҙмәтләр күрә башланы. Хәҙер бында семментал тоҡомло һыйырҙар үрсетелә, уларҙың продукты биреүсәнлеге лә күтәрелә.

Үткән йылда алдынғы һыйыр һауыусы Алтыбаева һәм Холостова иптәштәр һәр бер һыйырҙан 2585 литр һөт һауып алғайнылар. Улар 1951 йылда һәр бер фуражлағы һыйырҙан 3000 литр һөт һауып алырға һүҙ бирҙеләр.

Н. Ғисмәтуллин.

Өс игеҙ бала

Ғафури районы Архангель ауыл Советы «Победа» колхозының члены иптәш Денисова-Понамарева Федосия Дмитриевна өс бала тәрбиәләп килә ине.

Ошо көндәрҙә иптәш Денисова тағы өс игеҙ бала килтерҙе. Балаларҙың икеһе ир, береһе ҡыҙ бала.

Әсәгә район һаулыҡ һаҡлау бүлегенән ярҙамға врач һәм медсестра ебәрелде.

Иптәш Денисоваға государство тарафынан 2500 һум күләмендә бер ваҡытлы пособие бирелде.

И. Мәүлитҡолов.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу

Ужым ашлыҡтарын яҙ тәрбиәләү урожайҙы күтәреүҙә иң мөһим сараларҙың береһе булып тора.

Ужымдарҙы иртә яҙ урындағы һәм минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу хәҙер инде мәжбүри агротехник прием булып тора. Был саралар яҙҙың тәүге көндәренән үк уларҙың үҫеү шарттарын яҡшырта һәм үҫеүен тиҙләтә. Быны республикабыҙҙың бик күп колхоздарының һәм ғилми-тикшеренеү учреждениеләренең бай эш тәжрибәләрендә асыҡ күрергә була. Мәҫәлән, Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозы (агрономы иптәш Чертыковцева) үҙған йыл ужым культураларының һәр бер гектарына 1-әр центнер суперфосфат һәм 1-әр центнер сульфат аммоний иҫәбенән өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм шулай уҡ иртә яҙ тырматыу үткәрелгән 40 гектар майҙанда арыштың һәр гектарынан 23-әр центнер урожай алды. Шулай итеп колхоз ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һөҙөмтәһендә генә арыштың һәр бер гектарынан 5-әр центнер өҫтәмә урожай алыуға өлгәште, тигән һүҙ.

Яҙ көнө ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм иртә яҙ тырматыуҙың ниндәй эффект алыныуын баҫыусылыҡ-тәжрибә станцияларының эш тәжрибәләрендә лә яҡшы күрергә була. Бөрә тәжрибә баҫыуында дүрт йыл эсендә ужым сәсеүлегенең һәр бер гектарына уртаса 40-ар килограмм азот индереү һәр бер гектарға 5,4-әр центнер өҫтәмә урожай бирҙе. Өфө тәжрибә баҫыуында ла ужым сәсеүлектәренә шундай уҡ күләмдә өҫтәмә аҙыҡ индереү урожайҙы 4,8-әр центнерға күтәрҙе.

Республикабыҙҙың колхоздары быйыл урындағы ашламаларҙы — серегән тиреҫ, көл, ҡош тиҙәге һәм башҡа шундай ашламаларҙы үҙған йылға ҡарағанда байтаҡ артыҡ әҙерләнеләр. Ҡышҡы осорҙа ғына колхоздар 9000 тоннанан артыҡ минераль ашламалар ташып ҡуйҙылар. Күпселек колхоздар ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуға һәм шулай уҡ иртә яҙ тырматыуға яҡшы әҙерлек менән килделәр.

Бурыс — бына был мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланыуҙан, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы һәм тырматыуҙы иң ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәреүҙән тора. Был мөһим агротехник сараларҙы үҙ ваҡытында үткәргәндә генә уның юғары эффект алып буласаҡ.

Һәр бер колхозда ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыуҙың конкрет планы булырға, һәм шул план нигеҙендә һәр бер баҫыусылыҡ бригадаһында был эшкә етерлек һанда эшсе һәм йәнле тартыу көстәре бүленергә тейеш.

Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу алдынан көлде, ҡош тиҙәген, шулай уҡ минераль ашламаларҙы ентекләп тейергә һәм уны иләк аша үткәрергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта баҫыуға ашламаларҙы өлкәһеҙ ташып тороу өсөн тейешле һанда бестаркалар һәм башҡа транспорт бүлеү талап ителә. Ә баҫыуҙарҙа ҡоро япмалы ырҙындар, йәки башҡа биналар булғанда ашламаларҙы алдан ташып ҡуйыу яҡшы.

Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙа шаблонлыҡҡа юл ҡуйырға ярамай. Ашламаны сәсеүлектәрҙең торошон, әлек унда нәмә сәселеүен һәм ниндәй ашлама индерелеүен иҫәпкә алып, дифференциаль рәүештә индерергә кәрәк. Мәҫәлән, ашланған пар ерә йәки ҡуҙаҡлы культураларҙан һуң сәселгән ужымдарҙы фосфорлы-калий ашламалары, ә ашламалар индерелмәгән урындарҙа, яҙғы өҫтәмә аҙыҡландырыу тулыһынса индерелергә тейеш. Агрономдарҙан был өлкәлә колхоздарға ҙур ярҙам күрһәтеү талап ителә.

Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу тупраҡ өҫтө туң ваҡытта үткәрелә. Сама менән алғанда һәр бер гектарға парошок рәүешендә 3-4-әр центнер ҡош тиҙәге, 6-8-әр тонна тиреҫ шыйыҡсаһы, һәм шул уҡ күләмдә серегән тиреҫ индерергә мөмкин. Минераль ашламаларҙан: һәр бер гектарға 1-әр центнер сульфат аммоний, 1,5-әр центнер суперфосфат. Урындағы ашламаларҙы, шулай уҡ минераль ашламаларҙы бергә ҡушып индерергә тәҡдим ителә. Ужымдарҙы граную ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыу ҙа шулай уҡ яҡшы һөҙөмтәләр бирә.

Ашламалар ҡатнаш рәүешендә ужымдарҙы тырматҡанға тиклем, ер өҫөн ваҡытта индерелергә тейеш. Бынын ялан һәм урман-ялан райондары өсөн әһәмиәте айырыуса ҙур. Был эште һуңлатҡанда ашламаның тупраҡтың өҫкө ҡоро ҡатламына эләгеп, яҙғы ямғырҙар булмағанда тупраҡтың өҫтөндә ирәмәй ҡалыуы мөмкин. Өҫтәмә аҙыҡландырыуҙан һуң уҡ, тупраҡтың өлгөрөүенә ҡарап, атлы һәм трактор тырмалары менән тырматыу үткәрелә.

Пыш ҡына яҙғы ер тырматыуға ер өҫтө ҡатламланғас ҡына башлайҙар. Был дөрөҫ түгел, сөнки ужымдарҙы ер өҫтәндәге ҡатламдарҙы бөтөрөү өсөн түгел, ә уны булдырмаҫ өсөн тырматалар. Ҡатламдарҙың барлыҡҡа килеүе тупраҡ өҫтән ярылай һәм бик күп дымы юғала. Иртә яҙ тырматыу ужымдарҙы бына был ҡурҡыныстан һаҡлай. Ужымдарҙы тырматҡас та яҙғы ямғырҙар һуңында тупраҡ ҡатламдарының барлыҡҡа килеү ҡурҡынысы бар. Быны булдырмау өсөн күп кенә колхоздар ужымдарҙы ҡабатлап тырматыуҙы үткәрәләр.

Помшаҡ һәм тейешенсә үҙләштерелеп ҡтелмәгән тупраҡлы участкаларҙа ужымдарҙы тырматмайынса катоктар йөрөтөп сығырға кәрәк. Шулай уҡ насар ҡышлаған ужым сәсеүлектәрендә лә тырматыуға ҡаңош ителмәй.

Ужым сәсеүлектәрен яҙ хәстәрлек менән тәрбиәләү — үҙ ваҡытында өҫтәмә аҙыҡландырыу, боҙ ҡатламдары менән көрәш, һәм яҙғы тырматыу республикабыҙ колхозсыларына был ҡиммәтле культуранан юғары урожай үҫтереп алыуға ярҙам итәсәк.

Агроном Е. Носиков,
БАССР Ауыл хужалығы министерствоһының бөртөклө һәм майлы культуралар бүлеге начальнигы.

Картоф орлоғон яровойлаштырыу

Картоф орлоғон яровойлаштырып ултыртыу мөһим агротехник сара булып тора. Быны түбәндәге миҫалдарҙан күреп була: үҙған йылды Шаран районы «Сөн» колхозының мичуринсеһы иптәш Сәләхов яровойлаштырып ултыртылған картофтың һәр гектарынан 315-әр центнер, ә яровойлаштырмай ултыртҡан майҙанда 195-әр центнер урожай алды.

Йәй ҡыҫҡа, йылылыҡ аҙ булған таулы-урманлы райондарҙа картофты яровойлаштырыу бигерәк тә ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Дыуан районы Ленин исемендәге колхоздың баҡсасылыҡ бригадаһы бригадиры иптәш Связева картофты яровойлаштырып ултыртҡан участкала һәр гектарынан 300-әр центнер, шул уҡ участканың ябай орлоҡ менән ултыртҡан өлөшендә бары 180-шәр центнер урожай алды. Тимәк, картофты яровойлаштырыу айырым шарттарҙа урожайҙы хатта 100—120 процентҡа тиклем күтәрә. Күп һандағы тәжрибәләрҙең уртаса һөҙөмтәләренә ҡарағанда, яровойлаштырып ултыртыу урожайҙы 25—30 процентҡа күтәреүе беленде. Яровойлаштырған картоф ерҙән 13—15 көнгә тиҙерәк шытып сыға. Һөҙөмтәлә картоф үҫемлектәре тупраҡтағы яҙғы дым запасын яҡшы файҙалана, йәйге ҡыҙыу көндәргә тиклем көсәйеп ала. «Ранняя роза» кеүек сорттарҙы яровойлаштырып ултыртҡанда картоф урожайын 10—15 июлгә етештереп өлгөртөргә мөмкин.

Академик Т. Д. Лысенко методы буйынса яровойлаштырыу ауыр эш түгел. Быны өсөн 13 — 15 градуска йылы булған яҡты бина файҙаланыла. Унда таҡта һәм фанераларҙан 2 — 3 ярусты түшәм эшләнә. Уларҙың аралығы 60 сантиметр була. Уларға ҡояш яҡтылығы төшөп торорға тейеш.

Яровойлаштырыу өсөн таҙа, зарарланмаған орлоҡтар алына. Ултыртыу өсөн 60 — 70 грамм ауырлығындағы картоф бүлтектәре һайлана. Улар биналағы түшәмдәргә (кәштәләргә) ике-өс ҡатлы итеп һалына. Мөмкинлек булһа, бер ҡатлы итеп һалыу тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ.

Тәүге көндәрҙә бина йылытыла. Унда һауаның йылылығы 12—15 градусҡа тотола. Орлоҡтоң еҫешлеген кәметеү өсөн ара-тирә тышҡы һауа индерелә. Көндәр 18 — 20 градусҡа йылыныу менән бинаны ябып йылытыу туҡтатыла, ә вентиляция яһау көсәйтелә.

Яровойлаштырыу эшгеҙ булһын өсөн, 5 — 7 көн үткәс, күләгәлә ятҡан картофтарҙы ҡояш нуры аҫтында ятҡандары менән урындарын алмаштырырға һәм аҫтын өҫкә әйләндерергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта ауырыу картофтар алып ташлана. Яровойлаштырыу 30 — 35 көн буйына дауам итә. Ә картофты ултыртыу беҙҙең шарттарҙа 10 — 20 майҙа башҡарыла.

Яровойлаштырылған картофта 1,5—2 сантиметр оҙонлоҡта йәшел һәм ҡыҙылкөрән төҫтә, турыға күтәрелгән йыуан үҫентеләр барлыҡҡа киләләр. Уларҙы өҙергә, һындырырға ярамай. Юғиһә, был сараның ҡиммәте юғалтыласаҡ. Яровойлаштырылған картофты ҡарзинкалар, ящиктәр һәм йәшниктәр менән генә йөрөтөргә кәрәк.

Картоф хужалығы фәнни-тикшеренеү институтының тәжрибәләре яровойлаштырыуҙы парник кеүек соҡорҙарҙа үткәреү мөмкинлектәрен күрһәтә. Был маҡсатта 20—25 сантиметр тәрәнлектә, 1,5 метр киңлектә һәм теләгән тиклем оҙонлоҡта соҡор ҡаҙыла. Ул ҡоро, ышыҡ һәм ҡояш нурҙары төшөп торған урын булырға тейеш. Соҡор төбөнә 5 — 10 сантиметр ҡалынлыҡта һалам йәки ҡамыш-һалам сепкәһе түшәлә, өҫтөнә 2-3 ҡатлы итеп картоф һалына. Бында яровойлаштырылған картофтың тамырҙары барлыҡҡа килә. Картофты ултыртыуға алған саҡта бындай тамырҙар өҙөп ташлана. Һалҡындан һаҡлау өсөн соҡорҙо төндәрен ҡаплап ҡуйырға кәрәк. Һалҡын көндәрҙә соҡор көн уртаһында ғына бер нисә сәғәткә асыла. 25 — 30 градуслы эҫе көндәрҙә лә шулай уҡ ябыбыраҡ ҡуйырға кәрәк. Бында соҡорға күләгәләү эшләү яҡшыраҡ буласаҡ. Соҡорҙағы картоф 5 — 7 көн үткәс әйләндерелә. Бында картоф 20 — 25 көндә яровойлашып өлгөрә.

Сортлы орлоҡто һуңлап алыу йәки башҡа сәбәптәр арҡаһында яровизацияны үҙ ваҡытында үткәреп булмаһа, картоф орлоҡтарын йылытып ултыртырға мөмкин. Ул түбәндәгесә ойошторола: асыҡ, ҡоро урынға картоф таратылып һалына. Бында ул 7 — 9 көн яҡтыртыла. Был сара ла орлоҡтоң шытыуын тиҙләтә.

Агроном А. Әхмәров.

ЭКОНОМИК ТЕМАҒА

Баҫыусылыҡ бригадаларындағы бөтә резервтәрҙе файҙаланайыҡ

Бит колхоздарҙы эре хужалыҡтарға …ләндереү, бөтәһенән элек, коллектив …хеҙмәте дөрөҫ ойоштороуға перспективалы юл асты һәм көйәтле тәжин… …резервтарҙы файҙаланыуҙың сик… …мөмкинлектәрен тыуҙырҙы.

Эре ерләштерелгән колхозда хеҙмәтте ойоштороуҙың төп формаһы булып баҫыусылыҡ бригадалары тора. «Марс» колхозының икенсе номерлы баҫыусылыҡ бригадаһы менән мин 1936 йылдан бирле етәкселек итәм. Дөрөҫ, был бригада элек тә иң эре һәм алдынғы бригадаларҙың береһе ине. Ләкин колхоз ерләштерелгәндән һуң беҙҙең бригаданың бик күп яңы, элек бөтөнләй файҙаланылмаған резервтәре барлығы асыҡланды. Бригаданың составы яңы кадрҙар, инвентарҙар һәм средстволар менән тулыландырылды. Тимәк, беҙҙең бригада …принцибы нигеҙендә тағы ла …ҙурыраҡ аяҡҡа баҫты. Хәҙер бригаданың хеҙмәткә яраҡлы членңарҙы 83 …етә. 35 ил аты, бик күп хужалыҡ инвентарҙары, иген киптерәс һәм …бар.

МТС-тың трактор бригадаһы менән …ерҙе сөрөүҙе шыҡтыу—баҫыусылыҡ бригадаһының мул урожай өсөн көрәшендә … шарт булып тора. Был …хеҙмәт …һын шыҡта, …дөрөҫ урындаштырыуға ярҙам итә, социалистик ярышты киң йәйелдереү һәм алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалауҙы еңелә ҡуйыу мөмкинлеген барлыҡҡа килтерә.

Бөтә был ойоштороу саралары колхоз эреләштерелгәнгә тиклем файҙаланылмайылар. Сөнки беҙҙең бригаданы МТС-тың айырым трактор бригадаһы хеҙмәтләндермәй ине. Ошо арҡала механизаторҙар менән колхозсылар араһында эш сифатын үҙ-ара контролгә алыу мөмкинлеге булманы. Быйыл МТС-тың колхоз менән төҙөшкән договорын ҡабул иткәндә механизаторҙарҙың ошо мөмкинлектәрҙе файҙаланмауын беҙ ҡаты тәнҡитләнек.

Беҙҙең бригаданың сәсеүлек майҙаны хәҙер 600 гектарға етә. Фермаларҙа 600 баштан артыҡ мал иҫәпләнә. Билдәле, был ҙур хужалыҡ. Бындай хужалыҡтың производствоһын юғары етештереүсәнлекле хеҙмәт нигеҙендә ойоштороу бик мөһим. Ләкин беҙҙең колхозда әле булһа иҫке нормалар менән эшләү, хеҙмәт көндәрен иҫке нормалар буйынса расходлау дауам итә. Эреләштерелгән алдынғы колхоздарҙың тәжрибәләре бындай практиканың ярамһыҙ, иҫкергән икәнлеген күптән күрһәттеләр инде. Хәҙер беҙҙең баҫыуҙар яңы һәм көслө машиналар менән байытылды. Колхозсылар күптән инде иҫке нормаларҙы систематик арттырып үтәйҙәр. Шулай булғас, беҙҙең колхозда хеҙмәтте ойоштороу нигеҙе итеп яңы, прогрессив, фән ҡаҙаныштарына таянған яңы нормаларҙы ҡыйыу алырға мөмкинлек тыуҙы.

Үткән йыл беҙҙең бригада 70 гектар арыштың һәр бер гектарынан 20-шәр центнер иген алды. Был, һуғыштан һуңғы иң юғары урожай булды. Һөҙөмтәлә беҙҙең бригаданың колхозсылары хеҙмәт көндәренә 3,5-әр килограмм иген һәм ун процент өҫтәмә түләү алдылар. Һәр бер колхозсы уртаса 300-ҙән артыҡ хеҙмәт көнө эшләне.

Ләкин бригаданың бөтә мөмкинлектәрен иҫәпкә алғанда, беҙ, әле тик уртаса ғына эшләнек. Бөтә резервтарҙе файҙаланғанда тағы ла мулыраҡ урожай алырға мөмкин ине. Былтыр арбалар, сбруйҙар һәм башҡа инвентарҙар етешмәне. Агротехника саралары планын үтәүгә аҙ иғтибар ителде. Коллектив хеҙмәттә бик бәләкәй генә етешһеҙлек тә эшкә ҙур зарар килтерә.

Күптән түгел мин етәкселек иткән бригаданың сәсеүгә әҙерләнә тикшерелде. Беҙ баҫыуға сығыуға әҙерлеккә һынау үткәрҙек. Комиссия беҙҙең әҙерлекте яҡшы, бригада сәсеүгә бөгөндән үк сығырға әҙер, тип баһаланы.

Быйыл беҙ бөтә тәр инвентарҙарҙы ла запасы менән әҙерләп ҡуйҙыҡ. Был эштә балта оҫталары Зарипов һәм Сибағатуллин иптәштәрҙең хеҙмәте айырыуса ҙур. Улар 400 арбә тәгәрмәсе ашланелар. Ҡайыштан ишеп запас ҡамыт бауҙары әҙерләнек. Бөтә эш аттарына етерлек сбруйҙар булдырҙыҡ.

Агротехника саралары планын үтәүгә лә серьез әһәмиәт бирҙек. Бригаданың йәшелсә баҡсаһына ғына 400 йөк серегән тиреҫ сығарҙыҡ. Ә ауылдан алыҫ булған участкаларға тиреҫте трактор менән сығарабыҙ. Өс тонна минераль ашлама һатып алдыҡ. Көл һәм ҡош тиҙәге йыйыуҙы әшен дә уңышлы ойоштороҡ. Билдәле, бөтә был уңыштарға беҙ колхозды эреләтеү һөҙөмтәһендә өлгәштек.

Ләкин эреләштерелгән колхоздың өҫтәнлеге—хужалыҡ кампанияларын уңышлы үткәреү мөмкинлектәрен тыуҙырыу менән генә сикләнмәй әле. Эре хужалыҡтың үҫеүе һәм ныҡыуы уның күп тармаҡлы булыуына бәйләнгән. Ә беҙҙең «Марс» колхозында хужалыҡты күп тармаҡлы итеүҙең бик күп файҙаланылмаған резервтәре бар.

Беҙҙең колхоз баҫыуҙары тәбиғи һыу һаҡлағыс урындарына бай. Тик уларҙы лә һыу йыйылғас быуып ҡалдырырға ғына кәрәк. Быны өсөн әлләни тиклем расход талап ителмәй. Шулай эштәгәндә Ҡулбашҡыуаҡ һәм Нәгүҙебеләк үйһыулыҡтарында ике ҙур һыу ятҡылығы төҙөп буҙа. Ә уларҙан ҡайыуҙар ярҙамында 100 гектарҙан артыҡ сәсеүлектәрҙе һуғарырға мөмкин. Бынан тыш беҙҙең сәсеүлек майҙандары уртаһынан бик күп яҙғы һыуҙар ағып китәләр. Был һыуҙарҙы яҙҙан быуып ҡалғанда 200 гектарҙан күберәк майҙанда дым һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге бар. Тик ошо сараларҙы тормошҡа ашырыуҙан ғына беҙҙең колхоз 300 гектарҙан артыҡ майҙандан өҫтәмә рәүештә меңәрләгән бот урожай алыр ине.

Балыҡ үрсетеү һәм ҡаҙ, өйрәктәр аҫрау өсөн уңайлы булған ике күл бар. Ләкин ошо өҫтәмә доход алыу мөмкинлегенә беҙҙең колхоз председателе иптәш Даянов һәм правление членңары әле булһа әһәмиәт бирмәйҙәр. Ауылдан алыҫ түгел урында йылға буйында ҡурай еләге үҫә. Унда ҡарағат һәм сейә лә бик күп. Йыл һайын был тәбиғи емеш-еләк баҡсаһы малдарҙан тапатыла, әрәм-шәрәм ителә, урожайы йыйылмай. Уның майҙаны ике-өс гектарға етә. Был урынды колхоздың емеш-еләк баҡсаһы итеп кәртәләп, таҙартһаң, бына тигән баҡса эшләргә мөмкин. Ә колхоз унан йыл һайын унарлаған мең һум доход алыр ине.

Мәсетле районының күпселек колхоздары күмерҙе һатып алалар. Ә беҙҙең колхоз уны үҙе етештерә. Хатта Ҡыйғы районы колхоздары ла күмерҙе беҙҙең колхоздан килеп алалар. Ләкин ошо мөһим доход сығанағына беҙҙә аҙ иғтибар ителә әле. Уны күпләп сығарыр өсөн беҙҙең үҙ аҫсыбыҙ бар. Әгәр был эшкә тик бер генә кеше беркетеп ҡуйғанда ла, 4 көндә өс центнер күмер әҙерләп була. Бер кеше эшләгән хәлдә лә колхоз күмер яндырыуҙан йылына 10 мең һум доход ала ала. Был эшкә лә тейешенсә әһәмиәт бирелмәй. Уны бөтә йыл әйләнәһенә яндырырға һәм был эшкә ике-өс кеше беркетергә мөмкин. Тик күмер яндырыуҙы планлы ойошторорға кәрәк.

Һуғышҡа тиклем беҙҙә ике кирбес заводы бар ине. Хәҙер уның тик береһе генә эшләй. Ә мин етәкселек иткән бригадала кирбес заводы төҙәүҙе колхоз правлениеһе ни өсөндөр планлаштырмай. Беҙҙә эшсе көстәре етерлек, кирбес өсөн яраҡлы балсыҡ һәм башҡа материалдар ҙа күп. Мин үҙемдең бригаданың бөтә тәр эштәренән һуң ғына ла был эшкә һигеҙ колхозсыны беркетә алам. Ә ошо һигеҙ кеше менән бер йылда 80 мең кирбес әҙерләй алабыҙ. Тимәк, был, колхозға өҫтәмә 40 мең һум доход, тигән һүҙ.

Бына ни тиклем бай һәм перспективалы резервтар файҙаланылмай беҙҙә. Унан һуң беҙҙең колхоздың көтеүлектәре кеүек киң һәм туҡлыҡлы уланға бай яландар, ҡышын да туңмай торған шишмәләр районда бер генә колхозында ла юҡ. Тоҡом малдары үрсетеүҙең бөтә мөмкинлектәре бар. Тик бөтә был резервтарҙы файҙаланыу саралары ентекләп планлаштырылырға һәм уларҙы эреләтелгән колхоздың артабанғы үҫешенә, ныҡыуына буйһондорорға ғына кәрәк. Ә эреләтелгән колхоздың баҫыусылыҡ бригадалары бөтә резервтарҙе файҙаланыуҙа бик күп эшләй алалар. Урожайлылыҡты, малсылыҡтың продуктивлеген күтәреү һәм колхозды күп тармаҡлы хужалыҡ итеп үҫтереү өсөн беҙҙең мөмкинлектәребеҙ бик күп. Бындай резервтар һәр бер колхозда бар. Уларҙы күрә һәм таба, файҙалана белергә генә кәрәк. Беҙҙең бөгөнгө бурысыбыҙ бына ошо.

С. Мәүлитов,

Мәсетле районы «Марс» колхозының баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры.

ЧЕХОСЛОВАКИЯ ХАЛКЫ ТЫНЫСЛЫКТЫҢ ХАЛЫК-АРА СТАЛИНСЕ ПРЕМИЯ ЛАУРЕАТТАРЫН КОТЛАЙ

ПРАГА, 10 апрель. (ТАСС). Чехословакия газеталары тыныслыктың халык-ара Сталинсе премиялары бирелеүе тураһындағы хәбәрҙе урынлаштырыу дауам итәләр.

Тыныслыктың халык-ара Сталинсе премиялары бирелеү тураһындағы хәбәрҙе, тип яҙа «Руде право» газетаһы, бөтә прогрессив кешеләр [illegible] шатлык менән каршыланы. «Халыктар араһындағы тыныслыкты нығытыу өсөн» халык-ара Сталинсе премиялар булдырыу һәм уларҙы тыныслыкты яклау хәрәкәтенең алдынғы эшмәкәрҙәренә бирелеү Совет Союзының тыныслык политикаһының, бөтә илдәрҙәге тыныслык һөйөүсе кешеләр [illegible] яуап биреүсе политиканың яңы күрһәтелеше булып тора. [illegible]

Тыныслык һөйөүсе Чехословакия халкы [illegible]

Тыныслыктың халык-ара Сталинсе премиялары бирелеүе Монголия халык республикаһында отличтер

УЛАН-БАТОР, 10 апрель. (ТАСС). Бөгөн Монголия газеталары «Халыктар араһында тыныслыкты нығытыу өсөн» халык-ара Сталинсе премиялар комитетенең [illegible]

Тыныслыктың халык-ара Сталинсе премиялары бирелеүе Шанхайҙа отличтер

ШАНХАЙ, 10 апрель. (ТАСС). Шанхайҙа сыға торған бөтә газеталар тыныслыктың халык-ара Сталинсе премиялары бирелеүе тураһындағы хәбәрҙе [illegible] ҙур вклад итеп ҡарайҙар.

Франция хөкүмәтенең хурлыклы ҡарарына ҡаршы протестәр

ПАРИЖ. [illegible] Тыныслыктың Бөтә Донъя Советы [illegible]

[illegible]

ВАРШАВА. Франция территорияһында Тыныслыктың Бөтә Донъя Советы [illegible]

СОФИЯ. «Работническо дело» газетаһы [illegible] Сталиндең тәрән аҡыл-

лы күрһәтмәләрен ҙур рух күтәренкелеге менән үтәйҙәр.

БУХАРЕСТ. Тыныслыктың Бөтә Донъя Советын Франция территорияһында [illegible]

БЕРЛИН. АДН агентлығының хәбәр итеүенә ҡарағанда, профессор Вальтер Фриҙрих [illegible]

ХЕЛЬСИНКИ. «Финляндиялағы тыныслыкты яклаусылар» [illegible] ларҙың бөтәһен дә тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн француз көрәшселәре менән үҙҙәренең солидар булыуҙарын белдерергә саҡыра.

11 апрель. (ТАСС).

Румыния сигендә титосылар провокацияһына ҡаршы Румыния хөкүмәтенең протесе

БУХАРЕСТ, 11 апрель. (ТАСС). Румыния халҡ республикаһы сит ил эштәре министрлығы Югославияның Бухарестағы посольствоһына нота ебәрҙе. Был нотала, Югославияның сик буйы властәре тарафынан яһалған дошманлыҡ хәрәкәттәренә ҡаршы Румыния хөкүмәтенең бер нисә ҡат протест белдереүенә ҡарамаҫтан, Югославия хөкүмәте провокацияларҙа сик ҡуйыу өсөн һис бер төрлө сара күрмәне, тип әйтелә.

Нотала Румыния сигендә Югославия властәренең бик күп тапҡырҙар ҡәбәхәт рәүештә провокацион эштәр эшләгәне һанап сығыла.

Мәҫәлән, 1950 йылдың 15 сентябрендә 13 сәғәт 45 минутта Средиште ауылы районында Югославияның һаҡсы поста торған пограничнигы Румынияның һаҡсы поста торған часовойына атҡан.

1950 йылдың 23 сентябрендә Югославияның Островул Ограденҙәге пограничниктәре Румыния территорияһына табан уҡ атҡандар. Бер пуля Румыния һаҡсыһынан бер метр ғына алыҫлыҡта үтеп киткән.

1950 йылдың 7 декабрендә Югославия пограничниктәре сик буйындағы 119 һәм 120 номерлы бағаналар араһында булған линиянан 250 метр алыҫлыҡта Румынияның Пайлаш участкаһындағы пограничниктәренә ике тапҡыр автоматтан залп биргәндәр. Шул уҡ кисте Югославия пограничниктәре Валя Калугарға яҡын Румыния патруленә автоматик револьверҙарҙан бер нисә тапҡыр атҡандар.

1951 йылдың 16 ғинуарында, 8 февралендә һәм 14 февралендә шундай уҡ хәрәкәттәр урын тотҡан.

Нотала, халҡ-ара хоҡуҡтың иң элементарь нормаларын да тупаҫ рәүештә боҙоу булып торған юғарыла күрһәтелгән провокацион акттар бөтәһе лә Румыния халҡ республикаһына ҡарата Белград хөкүмәте тарафынан алып барылған дошманлыҡ политикаһының, Белград хөкүмәте хужаларына — Америка-Англия империалистарына хеҙмәт итеүсе политиканың бер өлөшө булып иҫәпләнә, тип күрһәтелә.

Румыния халҡ республикаһы хөкүмәте, тип әйтелә нотала, Югославия хөкүмәтенең сик буйындағы органдарының дошманлыҡ хәрәкәттәренә ҡаршы ныҡлы протест белдерә һәм был акттар өсөн, шулай уҡ улар ҡабатланһалар, уларҙың да бөтә эҙемтәләре өсөн яуаплылыҡты Югославия хөкүмәтенә йөкмәтә.

Макартур Алыҫ Көнсығышта верховный баш командующий вазифаһынан алынды

НЬЮ-ЙОРК, 11 апрель. (ТАСС). Президент Трумэндең приказы менән Макартур Алыҫ Көнсығышта верховный баш командующий вазифаһынан алынды. Макартурҙы алмаштырыуҙың сәбәбе матбуғатта иғлан ителмәй. Макартур Кореялағы хәлде алып барып сығарырға һәләтле булмағаны өсөн эшенән алынған, тип иҫәпләйҙәр.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 12 апрель. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһы баш командованиеһенең бөгөн тапшырған хәбәрендә фронттың бөтә участкаларында ла Халҡ армияһы частәре Ҡытай добровольцтары менән берлектә дошманға ҡаршы ҡаты һуғыш алып барыуҙарында дауам итәләр, тип әйтелә.

Ғилми работниктарҙың бөтә донъя федерацияһы икенсе сессияһының Прагала параллель ултырышы асылды

ПРАГА, 12 апрель. (ТАСС). Билдәле булғанса, ғилми работниктарҙың бөтә донъя федерацияһының 10 апрелдә Парижда асылған икенсе сессияһы эштәрендә ҡатнашлыҡ итергә тейешле Ҡытай, Чехословакия, Болгария һәм Польша ғалимдәренән булған күп кенә делегацияларға Францияның эске эштәр министрлығы Францияға инергә рөхсәт биреүҙән баш тартты.

Францияға инеүгә рөхсәт бирелмәгән ғалимдәр кисә Прагала параллель ултырышҡа йыйналдылар. Унда ҡатнашыусылар сессияның көн тәртибе менән таныштылар һәм Прагала йыйналған ғалимдәр менән туранан-тура бәйләнеш урынлаштырыу өсөн Парижҙан килгән инглиз ғалиме Бустерҙән һәм француз ғалиме Кагандың белдереүен тыңланылар. Ултырышта Парижҙағы сессияла ҡабул ителгән ҡарарҙар бер күңелдән хупланылар.

Бөгөн ғилми работниктарҙың бөтә донъя федерацияһы икенсе сессияһының параллель ултырышы үҙенең эшен дауам итте.

Аденауэрҙың Парижға килеүе

ПАРИЖ, 11 апрель. (ТАСС). Франс пресс агентлығының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Бонн «канцлеры» Аденауэр бөгөн Парижға килгән. Ул хәрби максаттарҙа Көнбайыш Европа илдәренең күмер һәм металлургия промышленноҫен берләштереүҙе күҙҙә тотоусы «Шуман планы» буйынса һөйләшеүҙәргә ҡатнаша.

ПАРИЖ, 11 апрель. (ТАСС). «Юманите» газетаһы «немец реваншистарының канцлеры» Аденауэрҙың Парижға килеүенә ҡаршы сығыш яһай. «Илебеҙҙең именлеге өсөн һәм бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн беҙҙең илебеҙҙә асыла торған һөйләшеүҙәрҙең нинди ҙур ҡурҡыныс булып тороуы тураһында, — тип яҙа газета, — француздарға хәбәр итеү өсөн тағы ла отҡыраҡ юлды уйлап табыу мөмкин түгел. Аденауэрҙың Парижға килеүенең маҡсаты һуғышҡа әҙерлектә тиҙләтеүҙә, шулай уҡ, Шуман планында ҡатнашыусы илдәрҙең хеҙмәтсәндәре өсөн ул әҙерлектәргә хас булған хәйерселектә һәм афаланыуҙы көсәйтеүҙән тора».

АВСТРАЛИЯЛА ТЫНЫСЛЫҠТЫҢ БӨТӘ ДОНЪЯ СОВЕТЕ МӨРӘЖӘҒӘТЕНӘ ҠУЛТАМҒА ЙЫЙНАУ БАШЛАНДЫ

СИДНЕЙ, 12 апрель. (ТАСС). 10 апрелдә бөтә Австралияла биш бөйөк державa араһында Тыныслыҡ Пакты төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамға йыйнау башланды.



Көньяҡ Урал тауы теҙмәһенең итәгендә урынлашҡан Маҡар ауылында ҡышын да туңмай торған шишмә аға. Яҙ тау биттәүҙәренән ҡар һыуы төшөү менән шишмә күп һыулы йылғаға әйләнә.

Һүрәттә: ҡаҙҙар шишмә һыуында ҡойоналар.

М. Әхмәтйәнов фото.

Фельетон

Фанер такта эргәһендә

Өфө ҡалаһының үҙәк баҙар майҙанында 1-се номерлы промтауар магазины ишеге эргәһендә бик ныҡ ҡаҙаҡлап ҡуйылған фанер такта тора. Уға «Разнопромсоюз»дың штаттан тыш художнигы ҡулдары менән шундай һүҙҙәр яҙылған:

«Бында кейемдәрҙе таҙартыу һәм төрлө төҫкә буяу буйынса заказдар ҡабул ителә! Буятырға теләүсе граждандар! Заказдарығыҙ менән ашығығыҙ! Яҡшы һәм тиҙ башҡарыла!!!».

Магазин эсендә ҙур ғына шкаф, уның менән йәнәшәлә — өҫтәл, өҫтәл артында заказдар ҡабул итеп алыусы Надежда Куценко ултыра. Әле генә ҡабул итеп алған кулдәкте шкафҡа элеп ҡуйғандан һуң, ул нәүбәт көтөп торған береүгә мөрәжәғәт итте:

— Һеҙгә пальтоғыҙҙы икенсе төҫкә буярғамы? Күк төҫкәме? Юҡ, юҡ ярамай. Ҡуйы ҡыҙыл төҫкә буярға кәрәк. Әллә һеҙ һуңғы моданы белмәйһегеҙме?

— Яҡшы. Һеҙҙеңсә булһын. Пальтоны ҡасан килеп алырға мөмкин?

— Бына квитанция. Унда бөтәһе лә асыҡ әйтелгән — 15 көн.

...Ярты ай үтте.

— Әҙерме?

— Юҡ, ике-өс көндән һуң килерһегеҙ.

— Һеҙ бит вәғәҙә иткәйнегеҙ...

— Ҡарағыҙ әле, һеҙ бик еңел генә уйлайһығыҙ икән, гражданка. Өр-яңынан буяу, тигән һүҙ — ул бөтөнләй яңы төҫ биреү, тигән һүҙ... Ул эш бешереү түгел бит.

...Бына бер ваҡыт кинәт кенә шунда кейемдәр ҡабул итеү һәм биреү туҡтатылды һәм заказчиктар кейемдәр ҡабул итеп торған Надежда Куценконы бер нисә ай буйына эҙләнеләр.

— Был кем лавочкаһы? — тип һораны гражданка Лосева юғарыла күрһәтелгән һүҙҙәр яҙылған белдереү эргәһендә йыйналып торған заказчиктарҙан.

— Беҙ, үҙебеҙ ҙә, бына өс ай инде шул мәсьәләне хәл итә алмай баш ватабыҙ, — тинеләр улар. — Квитанция [illegible] мәй. Унда бына нәмә тип [illegible] «1 Май исемендәге артель. Ҡай[illegible] ай ваҡыт эсендә аҡса түләп [illegible] лар, һатыласаҡтар. Н. Куц[illegible]» бер нәмә лә юҡ.

Заказчиктар «Разнопромсо[illegible] никовскийҙағы 1 Май исемен[illegible] председателе иптәш Әделгәр[illegible] лавочканы бынан ике ай эл[illegible] уҡ ойошманың Черниковскийҙа[illegible] бер артеле — Уразметов [illegible] «Утильзаготовитель» артел[illegible] тапшырғанлығын ишеттеләр. [illegible] рәев был цехтың эшен [illegible] һәм уның тураһында [illegible] инде. Ә Уразметов заказчиктар[illegible] ты яңы ғына ҡабул итеп [illegible] уның эшенә төшөнөп тә [illegible] әле», тип яуап бирә.

...Беҙгә нәмә эшләргә һуң[illegible] дауам иттеләр үҙҙәренең һүҙҙә[illegible] такта эргәһендә йыйналып тор[illegible] лар.

— Уразметов миңә телефо[illegible] йемдәр ҡабул итеүсе Надежда [illegible] бөтә әйберҙәрҙе лә үҙенә алып, [illegible] шып ҡуйған, тип хәбәр итте, [illegible] заказчица Лосева.

— Моғайын, ул әле [illegible] рыу өсөн минең ебәк күлдәгем[illegible] ҡарай торғандыр, — тине [illegible]

— Минең пальтомды ла [illegible] яҙмыш көтәлер әле, — тине [illegible]

— Эйе, әле Уразметов [illegible] яуаплылыҡ тойғоһо [illegible] һәм унан эш талап итерг[illegible] лыҡ иткәнсе, ул һәр көн һайы[illegible] йем кейәсәк.

«Разнопромсоюз» председател[illegible] Сюндюковтан һәм Башпромсовет [illegible] дателе иптәш Сибәғәтуллина[illegible] шул комедияның нисек тамам[illegible] леген һорағыбыҙ килә.

М. Шу[illegible]

Намыҫлы хеҙмәт

Әлшәй районы «Ҡыҙыл Байраҡ» ауыл хужалығы артеленең члены иптәш Мөҙәрисов колхоз ойошторолғандан бирле фермала эшләй. Ул һыйырҙар көтә. Колхозда һөт һауып алыу йылдан-йыл арта бара. Был эште өлгөлө башҡарыуы өсөн ул колхоз правлениеһе тарафынан йыл һайын бүләкләнеп килә. Иптәш [illegible]сов быттыр хеҙмәт көндәренә [illegible] ләү тәртибендә 200 литр һөт [illegible] тана алды. Ул район Советы [illegible] тарафынан 10 тапҡыр Почет гр[illegible] менән наградланды.

В. [illegible]

Ауыл хужалығы мастерҙәре әҙерләү курсында

Балтач районының Карл Маркс, Молотов, Жданов исемендәге һәм башҡа колхоздарында өс йыллыҡ агротехника курсы ойошторолғайны. Хәҙер был курстарҙа правление һәм ревизия комиссияһының члендәре, бригадирҙар, малсылыҡ работниктәре уҡыйҙар.

Был курс Куйбышев исемендәге колхозда айырыуса яҡшы ойошторолған. Мәктәп йылы, уҡыусылар уҡыу[illegible] ҡары менән тәьмин ителгән. Улар[illegible] ға яҡшы әҙерләнеп килә[illegible] уҡытыу эштәре менән колхоз[illegible] номы иптәш Биккулова етәкс[illegible]

Ә. Ки[illegible]

Быуала балыҡ үрсетеү

Башҡортостан республикаһы йылғаларға һәм күлдәргә бай. Һуғышҡа тиклем алынған иҫәптәр буйынса республика колхоздарында һәм совхоздарында 645 урында 2 мең гектар майҙанды алып торған быуалар һәм һыу ятҡылыҡтары булды. Был иҫәпкә күлдәр һәм йылғалар инмәйҙәр. Республиканың шундай һыу байлыҡтары халыҡ хужалығын алға ебәреүҙең сығанаҡтары булып тора. Улар базаһында балыҡтар үрсетергә, ҡаҙ һәм өйрәк аҫрауҙы ойоштороорға мөмкин.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең биш йыллыҡ планы социалистик ауыл хужалығы алдына ҙур бурыс ҡуйып, «һуғарыу участкалары ойоштороу һәм уларҙа йәшелсәләр, картуф һәм башҡа ауыл хужалығы культуралары үҫтереү өсөн колхоздарҙа һәм совхоздарҙа быуаларҙы һәм һыу ятҡылыҡтарын аяҡҡа баҫтырырға һәм уларҙы төҙөүҙе дауам итергә; был быуаларҙа һәм һыу ятҡылыҡтарында балыҡтар һәм өйрәк, ҡаҙҙар үрсетергә», — тип күрһәтте.

СССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планы тураһындағы ҡарары буйынса 1955 йылға тиклем Башҡортостан колхоздарында 300 быуа һәм һыу ятҡылығы төҙөлергә тейеш.

Республикабыҙҙа тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу планы уңышлы үтәлә. 1949 — 1950 йылдарҙа колхоздарҙа инженер ҡоролма типлы, 500 гектар майҙанлы 99 быуа һәм колхоздарҙың үҙ көстәре менән 126 быуа төҙөлдө.

Колхоз быуаларын үрсем балыҡ материалы менән тәьмин итеү юлында ҙур эш алып барыла. Благовещен районында государстволың «Нцела» балыҡ үрсетеү питомнигы үрсетеү өсөн йылына 140 мең дана карп, Бөрө районы Молотов исемендәге колхоз питомнигы 30 — 40 мең дана карп һәм сазан етештерә ала. Ләкин улар балыҡ үрсемдәренә булған талапты тәьмин итә алмайҙар әле. Шуға күрә беҙгә яңы питомниктар ойоштороорға кәрәк. Бында питомниктарҙың колхоздарҙы хеҙмәтләндерә торған территориялары радиусы 100 километрҙан да артмаҫҡа тейеш. Питомниктар күп булған һайын балыҡ үрсетеүҙе йылдам алға ебәрергә мөмкин.

Күп кенә колхоздарҙың һәм совхоздарҙың быуаларында балыҡтар үрсетеләләр. Ләкин уларҙың күбеселеге урындағы, тоҡомһоҙ балыҡтарҙан тора. Беҙ юғары тоҡомло балыҡтарҙы — карп, сазан, табан балығы һәм башҡаларҙы үрсетеүҙе тәьмин итергә тейешбеҙ. Быға ныҡ иғтибар итеүсе хужалыҡтар балыҡ үрсетеүҙән ҙур доход алып килалар.

Мәҫәлән, Шишмә районы «Берек» һәм «Ҡыҙыл Урал» колхоздары 1937 йылдан бирле үҙ быуаларында үрсетелгән карп балыҡтарын тотоуҙан юғары доход алып килделәр. Ләкин һуғыштан һуңғы йылдарҙа уларҙың быуа хужалығы аяҡҡа баҫтырылмаһы, һөҙөмтәлә ҙур доход сығанағы юғалтылды. Улар тик үҙған йыл ғына үҙҙәрендәге быуаларҙы нығыттылар. Был, уларға балыҡ үрсетеүҙе аппынан йәйелдереп ебәрергә мөмкинлек бирә.

Бөрө районы «Ленинский Октябрь» колхозы балыҡ үрсетеү эше менән инде 13 йыл шөғөлләнә. Бында йыл һайын быуаның һәр бер гектар майҙанынан 4-әр центнер карп балығы алына. Колхоз шулай уҡ үрсем балыҡтар ҙа әҙерләй.

Республикабыҙҙың бөтә колхоздарында ла балыҡ үрсетеүҙе ойоштороорға һәм шуның менән доход сығанағын арттырырға мөмкин. Бының өсөн, бөтәһенән элек, быуалар һәм һыу ятҡылыҡтары төҙөргә, шулай уҡ күлдәрҙе һәм йылғаларҙы файҙаланыуҙы ойоштороорға кәрәк. Бындай төҙөлештәр күпселек колхоздарҙа һәм совхоздарҙа алып барыла ла инде.

Күп көс һалып төҙөлгән быуаларҙы юғары доходлы итеү өсөн уларҙа яҡшы тоҡомло балыҡтар үрсетеүҙе ойоштороорға кәрәк. Карп, сазан, ҡара балыҡ һәм карась шундай балыҡтар булып торалар. Был төркөм балыҡтарҙы йылы һыуҙа, аҡмай торған быуаларҙа йәки күлдәрҙә үрсетергә мөмкин.

Быуа хужалығы, балыҡ үрсетеүҙең яраҡлылығына ҡарап, ике төрлө була. Тулы быуа хужалығы балыҡтарҙы уылдырыҡтан үрсетеү һәм ҡышлатыу өсөн яраҡлы була. Ә ярым быуа хужалығы яҙ үрсем балыҡтар ебәреү һәм көҙ уларҙы аулау өсөн генә файҙаланыла.

Балыҡтарҙы үрсетеү өсөн быуаларҙың аҙыҡҡа бай булыуын иҫкә алырға кәрәк. Ҡара тупраҡлы һәм мәтеле быуаларҙа аҙыҡ күп була. Бында үҫкән үҫемлектәр һәм яр буйындағы бөжәктәр балыҡтар өсөн аҙыҡ булып торалар. Урмандағы йәки далалағы быуаға ҡарағанда, уңдырышлы урындағы быуа бик күп өҫтөн булып иҫәпләнә. Сөнки бындағы быуаға йыйылған мәте ағып килә, ә ул балыҡ өсөн бай аҙыҡ була ала. Шишмә һәм коҙок һыуҙары аға торған быуаларға ҡарағанда, йылға һәм ҡар, ямғыр һыуҙары ағып төшә торған быуалар балыҡ үрсетеү өсөн уңайлы була. Быуаларҙың тәрәнлеге 1-2 метр булырға тейеш. Унан да тәрән булған быуа тиҙ йылынмай, унда үҫемлектәр насар үҫә. Шуға күрә бындай быуа балыҡ үрсетеүгә уңайлы булмай.

Балыҡ үрсетелә торған быуалар ағыҙыла һәм ағыҙылмай торған була. Ағыҙыла торған быуала балыҡтар ебәрелгән үрсемдән үҫтерелә. Бында көҙ көнө быуаның һыуы ағыҙып ебәрелә һәм балыҡтары тотола. Ә ағыҙылмай торған быуала балыҡ йыл әйләнәһенә үҫтерелә һәм ундағы балыҡ тик ау менән һөҙөп кенә тотола. Бындай быуалар үрсем балыҡтар ебәреүгә тиклем яҡшылап әҙерләнергә тейештәр. Ул таҙартыла, йыртҡыс балыҡтар бөтөрөлә. Балыҡ үрсетелә торған быуаларға сәсеүлек өсөн һалабаш, етен һәм киндер батырырға ярамай.

Карп үрсетеү өсөн билдәләнгән быуаларға үрсем балыҡтар апрель аҙағында йәки май башында ебәреләләр. Улар көҙ көнө аулана. Ау йөрөтөү өсөн уңайһыҙ булған, ҙур һәм күп үҫемлектәр үҫкән быуаларҙа карп балығын үрсетеп булмай. Ундай быуаларҙа табан балығы һәм ҡара балыҡтар үрсетергә мөмкин.

Балыҡ үрсетелә торған быуаларҙа шулай уҡ өйрәктәр һәм ҡаҙҙар үрсетергә мөмкин. Бындай быуаларҙың продуктивлеге 20 — 25 процентҡа арта.

Быуаларға карп балыҡтарын ебәргәндән һуң 10 көн үткәс кенә ҡаҙҙарҙы һәм өйрәктәрҙе быуаға төшөрөргә ярай. Был ваҡыт эсендә үрсем балыҡтар быуаны үҙләштереп өлгөрә алалар.

Өйрәк бәбкәләрен, 20 —30 көн тулғас ҡына, быуала һыуҙа йөҙөргә башларға ярай. Бәбкәләрҙе аҫрау өсөн яр башында, ҡоро һәм ышыҡ урында, фанеранан бәләкәй өй эшләнә. Бында улар ашатылалар. Пекин тоҡомло өйрәктәр өс айлыҡ ваҡытҡа 1,5 — 2 килограмм ауырлығына еталәр. Май айында күлгә ебәрелгән бындай өйрәктәрҙе июль айында ит өсөн файҙаланырға мөмкин. Шулай итеп, быуала сентябрь айына тиклем өс срокта өйрәктәр үҫтереп алыу тәьмин ителә.

Башҡортостан колхоздары балыҡтар һәм ҡаҙ, өйрәктәр үрсетеүгә ныҡ иғтибар итергә тейештәр. Өҫтәмә доход бирә торған бындай хужалыҡ тармаҡтарын һәр бер колхозда йәйелдереп ебәрергә кәрәк.

Е. Сальников,
Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министрлығының мелиорация управлениеһының баш инженеры.

Редактор F. F. FAБ[illegible]

БЕЛДЕРЕҮ

Өфө тимер юлы Глуховская станцияһындағы МГБ санаторийҙәре төҙөлөш[illegible] инженерҙар, техниктар, прорабтар һәм десятниктар, төҙөүселәр һәм с[illegible] никтар, хеҙмәт һәм эш хаҡы буйынса инженерҙар һәм техниктар, пла[illegible] тәр, нормировщиктар, төҙөлөш механизмдәре һәм автомобиль эште[illegible] йынса механизаторҙар, механиктар, такта ярыу, тимер эше һәм төҙөлөш [illegible] ханизмдәре буйынса мастерҙар, балта оҫталары, столярҙар, шоферҙар, мот[illegible] тәр, дизелистар, автослесарҙар, автомеханиктар, йорт төҙөү технорукы, төҙөлөш специальностәре булған эшселәр, төрлө эшселәр, әлкәә бүл[illegible] тәр, уның ярҙамсыһы һәм бухгалтерҙар талап ителә.

Эшкә ҡабул ителеүселәр торлаҡ майҙаны һәм коммуналь хеҙмәтләү[illegible] менән тәьмин ителәләр.

Белешмәләр өсөн һәм хат менән түбәндәге адрес буйынса мөрәжәғәт ит[illegible]

Өфө тимер юлының Глуховская станцияһы, МГБ-ның төҙөлөш бүлег[illegible]
Өфө ҡалаһы Ленин урамы, 9-сы номерлы йорт, 7-се квартира Зерла[illegible] киске сәғәт 5-тән алып 7-гә тиклем.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышле[illegible] бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80 49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01932. Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.0[illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се йыл сығa.

Ҡыҙыл Башҡортостан

1951 йыл
№ 74 (8791)
15
АПРЕЛЬ
йәкшәмбе

БКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин

Б Ө Г Ө Н Г Ө   Н О М Е Р Ҙ Ә:

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ 1951 ЙЫЛДЫҢ 13 АПРЕЛДӘГЕ УЛТЫРЫШЫ ТУРАҺЫНДА ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ (1-се бит).

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ. Х. Әбүзәров. — Механизаторҙар ярышы (1-се бит).

Х. Сафин. — Юғары урожай өсөн көрәш (1-се бит).

1951 ЙЫЛҒА РСФСР-ҙың ГОСУДАРСТВО БЮДЖЕТЕ ТУРАҺЫНДА ҺӘМ РСФСР-ҙың 1950 ЙЫЛҒЫ ГОСУДАРСТВО БЮДЖЕТЕНЕҢ ҮТӘЛЕШЕ ТУРАҺЫНДА РСФСР ФИНАНС МИНИСТРЫ ДЕПУТАТ И. И. ФАДЕЕВТЕҢ ДОКЛАДЫ (2—3-сө биттәр).

АУЫЛ СОВЕТЫ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ ТРИБУНАҺЫ. С. Дәүләтшин. — Культура-ағартыу эшен артабан яҡшыртыу өсөн (3-сө бит).

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ. Ғ. Китабов. — Грамматик терминдарҙы берләштереү тураһында (3-сө бит).

Әйрәм Вәли. — Сәмиғуллин (4-се бит).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Тыныс төҙөлөш бюджеты

Кисә Мәскәүҙә, Ҙур Кремль дворецында, Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының өсөнсө саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы үҙенең эшен башланы. Сессия 1951 йылға республиканың Государство бюджеты тураһында доклад һәм 1950 йылғы бюджеттең үтәлеше тураһында отчет тыңланы.

Коммунистар партияһы, Совет хөкүмәте, иптәш Сталин союзный һәм автономиялы республикаларҙың экономикаһын һәм культураһын бөтә яҡлап үҫтереү тураһында арымай-талмай хәстәрлек күрәләр, беҙҙең күп милләтле иһһеҙ-сикһеҙ Тыуған илебеҙҙең бөтә халыҡтарының да сәскә атыуы өсөн шарттар тыуҙыралар. Тыныс ижади хеҙмәттә, коммунистик төҙөлештең бөйөк маҡсаттарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәштә Советтар Союзы халыҡтарының туғандарса хеҙмәттәшлеге һәм дуҫлығы үҫә һәм нығый.

Россия Федерацияһы — тиң хоҡуҡлы союзный совет республикалар араһында беренсе республика. Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә Россия Федерацияһының халҡы, беҙҙең ҡеүәтле Ватаныбыҙҙың бөтә халҡы кеүек үк, коммунизм төҙөүҙең мәһабәт сталинса программаһын рухланып тормошҡа ашыра.

Һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡты тулыһынса һәм арттырып үтәү өсөн көрәштә хеҙмәт геройлығы күрһәткән рус халҡының гүзәл сифаттары тыныс төҙөлөш йылдарында яңы көс менән асылды. Россия Федерацияһының хеҙмәтсәндәре үҙ араларынан производство новаторҙарын барлыҡҡа килтерәләр, социалистик экономиканың, халыҡтың көн күрешенең һәм культураһының артабан күтәрелеше өсөн фиҙакәр көрәшәләр.

1951 йылға һәр бер республика, шул иҫәптән Россия Федерацияһы алдында халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарын да артабан үҫтереү буйынса яуаплы бурыстар ҡуйылған. Быйыл промышленностең һәм ауыл хужалығының яңынан байтаҡ үҫеүенә өлгәшелергә, капиталь төҙөлөш һәм хеҙмәтсәндәр тормошоноң материаль һәм культура кимәлен артабан күтәреү буйынса ҙур эштәр башҡарылырға тейеш.

Республика Верховный Советының ҡарамағына индерелгән РСФСР Государство бюджеты был мөһим бурыстарҙы уңышлы хәл итеүгә тулыһынса йүнәлтелгән.

1951 йылға РСФСР бюджетының доход өлөшө 54 миллиард 179 миллион һум суммала күҙҙә тотола. Социалистик хужалыҡтан алынған килемдәр бюджет доходының төп сығанағы булып тора. Бюджет расходтары 54 миллиард 136 миллион һум суммала билдәләнелгән. 1951 йылда, элекке йылдарҙағы кеүек үк, РСФСР Государство бюджетының бөтә средстволарының унлан туғыҙ өлөшө тиерлек халыҡ хужалығына һәм социаль культура сараларына һалына.

Социаль культура сараларына расходтар РСФСР Государство бюджеты расходтарының төп статьялары булып тора. 1951 йылға республика бюджетында уларҙың удель ауырлығы 70,8 процент тәшкил итә. Совет государствоһы халыҡ мәғарифенә һәм һаулыҡ һаҡлауға, халыҡ хужалығы һәм культура төҙөлөшө өсөн кадрҙар әҙерләүгә, мәктәптәр һәм больницалар селтәрен киңәйтеүгә, балалар баҡсаларын һәм балалар йорттарын тотоуға средстволарҙы йәлләмәй. Беҙҙең ҡалаларыбыҙҙа һәм ауылдарыбыҙҙа яңы библиотекалар, ауыл клубтары, кинотеатрҙар асыла. РСФСР бюджеты буйынса культура-ағартыу учреждениеларын тотоуға ассигнованиелар быйыл миллиард һум самаһы тәшкил итәсәк.

Социаль-культура сараларына РСФСР бюджеты буйынса ассигнованиеларҙан тыш республика территорияһында йыл һайын союзный бюджеттан ҙур средстволар тотола. Билдәле булыуынса, 1951 йылға СССР-ҙың бөтә Государство бюджеты буйынса совет культураһын үҫтереүгә ассигнованиелар 120,8 миллиард һум тәшкил итәләр. Беҙҙең социалистик державабыҙ кеүек донъяла бер генә ил дә был маҡсатҡа шундай ҙур средстволар тотмай!

Совет Государствоһының бюджеты — тыныс төҙөлөш, социалистик экономиканы артабан үҫтереү, халыҡтың көн-күрешен һәм культураһын тайпылышһыҙ күтәреү бюджеты ул.

Халыҡ хужалығы планын һәм Государство бюджетын уңышлы үтәү интерестары производствоның бөтә хужалыҡ һәм финанс эшмәкәрлегенең сифатын артабан күтәреүҙе, эске резервтарын тулыраҡ файҙаланыуҙы талап итә. Хужаһыҙлыҡты һәм тәүҙыҡһыҙлыҡты тулыһынса бөтөрергә, бөтә урындарҙа ла һәм бөтә нәмәлә лә экономияның ныҡлы режимен үткәрергә кәрәк. Бөтә партия һәм хужалыҡ ойошмаларының, промышленность, төҙөлөш, транспорт һәм ауыл хужалығының бөтә работниктарының тырышлыҡтары шунда тупланырға тейеш.

Миллионлаған совет патриоттары производство заданиеларын срогынан алда үтәү, техниканы яҡшыраҡ файҙаланыу, продукция етештереүҙе арттырыу, уның сифатын күтәреү һәм үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу өсөн ярыша. Эшселәрҙең, колхозсыларҙың, совет интеллигенцияһының ижади инициативаһы халыҡ хужалығында экономия һәм һаҡлыҡ менән тотоноу, социалистик накоплениеларҙың тайпылышһыҙ үҫеүе өсөн көрәштә эленән-эле яңы башланғыстар тыуҙыра.

Большевиктар партияһы етәкселегендә, иптәш Сталин юлбашсылығында совет халҡы үҙенең фиҙакәр хеҙмәте менән һәйкәлле социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен арымай-талмай нығыта, бөтә донъяла тыныслыҡты нығытыу эшенә бөйөк вклад индерә.

(«Правда» газетаһының 14 апрелдәге баш мәҡәләһе).

РСФСР Верховный Советының 1951 йылдың 13 апрелдәге ултырышы тураһында ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ

13 апрелдә, кискә 6 сәғәттә, Кремлдә, Ҙур Кремль дворецында РСФСР-ҙың өсөнсө саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы асылды.

Депутат С. П. Афанасьев тәҡдиме буйынса сессияны РСФСР Верховный Советының иң ҡарт депутаттарының береһе СССР медицина фәндәре Академияһының президенты Николай Николаевич Аничков асты.

Депутат Аничковтың телмәренән һуң РСФСР Верховный Советы РСФСР Верховный Советының Председателен һәм Председателдең урынбаҫарҙарын һайлауға күсте.

РСФСР Верховный Советының Председателе итеп бер тауыштан депутат Леонид Николаевич Соловьев һайланды; Председателдең урынбаҫарҙары итеп депутаттар Кәримә Мөхәмәтйәр ҡыҙы Абдуллина, Мирғарифан Замалеевич Азизов, Анатолий Семенович Бәрисенко, Сергей Михайлович Бутузов, Алексей Антонович Ильюшин, Нонна Александровна Муравьева, Иван Васильевич Окунев, Елена Ивановна Третьякова һайланды.

РСФСР Верховный Советы Верховный Совет ултырыштарының түбәндәге регламентын ҡабул итте:

1. РСФСР Верховный Советы сессияһының ултырыштары иртәнге 11 сәғәттән көндөҙгө 3 сәғәткә тиклем һәм кискә 6 сәғәттән 9 сәғәткә тиклем үткәреләләр.

2. РСФСР Верховный Советы сессияһының көн тәртибе мәсьәләләре буйынса докладсылар РСФСР Верховный Советының Председателе тарафынан раҫланалар.

3. РСФСР Верховный Советы депутаттарының иң кәмендә 50 кешенән торған һәр бер группаһы үҙенең докладсыһын күрһәтә ала.

4. Докладсыларға доклад яһау өсөн 1 сәғәт, йомғаҡлау һүҙе өсөн 30 минут, өҫтәмә докладсыларға өҫтәмә доклад өсөн 30 минут, йомғаҡлау һүҙе өсөн 15 минут ваҡыт бирелә.

5. Ораторҙарға беренсе тапҡыр һөйләгәндә — 20 минут, икенсе тапҡыр — 5 минут ваҡыт бирелә.

6. Шәхси тарҙалар һәм фактик белешмәләр яҙма рәүештә биреләләр һәм РСФСР Верховный Советының Председателе тарафынан һис кисекмәҫтән йәки, уларҙың йөкмәткеһенә ҡарап, ултырыш аҙағында иғлан ителәләр.

7. Нәүбәттән тыш һорауҙар яҙма рәүештә биреләләр һәм РСФСР Верховный Советының Председателе тарафынан һис кисекмәҫтән иғлан ителәләр.

8. Көн тәртибенә ҡарата һөйләү өсөн 5 минут ваҡыт бирелә.

9. Тауышҡа ҡуйыу тәртибе буйынса һөйләү өсөн 3 минут ваҡыт бирелә.

Старейшиналар Советының тапшырыуы буйынса депутат З. Ф. Олейник РСФСР Верховный Советы ултырыштарының көн тәртибе тураһында тәҡдим индерҙе. РСФСР Верховный Советы түбәндәге көн тәртибен ҡабул итте:

1. РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджетын раҫлау һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетының үтәлеше тураһында отчетты раҫлау;

2. РСФСР Верховный Советының Мандат комиссияһын һайлау;

3. РСФСР Верховный Советының даими комиссияларын һайлау;

4. РСФСР Верховный Советы Президиумының Указдарын раҫлау;

5. РСФСР Верховный Советының Президиумын һайлау;

6. РСФСР Хөкүмәтен — РСФСР Министрҙар Советын төҙөү.

РСФСР Верховный Советы РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджеты һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетының үтәлеше тураһында РСФСР финанс Министры депутат И. И. Фадеев докладын тыңланы.

РСФСР Верховный Советы депутаттарының полномочиеларын тикшереү өсөн 11 кеше составында Мандат комиссияһы һайланды:

Мандат комиссияһының председателе— Гришин Иван Тимофеевич.

Мандат комиссияһының члендары: Бобровников Николай Иванович; Васильев Иван Фролович; Дерябин Степан Андреевич; Ефремов Леонид Николаевич; Крахмалев Михаил Константинович; Пәнев Зосима Васильевич; Семенова Евдокия Семеновна; Шарова Анна Кирилловна; Шаталин Григорий Иванович; Шелепин Александр Николаевич.

Унан һуң РСФСР Верховный Советы РСФСР Верховный Советының даими комиссияларын һайлау тураһындағы мәсьәләне ҡарауға күсте.

Горький ҡалаһы, Иркутск, Калинин, Курск, Чита өлкәләре һәм Ставрополь крайы депутаттары группаһынан депутат И. Н. Зимин тәҡдиме буйынса РСФСР Верховный Советы 15 кеше составында законлар тәҡдим итеү комиссияһын һайланы:

Комиссия председателе — Тищенко Владимир Иосифович.

Комиссия члендары: Александрова Анна Васильевна; Березин Иван Емельянович; Бородкин Николай Мартынович; Виноградов Виктор Владимирович; Герасимов Александр Михайлович; Денисов Георгий Аполлинарьевич; Ершов Валентин Николаевич; Ломоносов Сергей Иванович; Мамонов Федор Антонович; Матвеева Александра Ефимовна; Прощунин Николай Эммануилович; Сергеев Сергей Петрович; Суетин Михаил Сергеевич; Хахалина Елена Григорьевна.

Мәскәү, Ленинград, Орел, Молотов, Челябе өлкәләре һәм Удмурт АССР-ы депутаттары группаһынан сығып һөйләгән депутат М. С. Суетин тәҡдиме буйынса РСФСР Верховный Советы 19 кеше составында Бюджет комиссияһын һайланы.

Комиссия председателе — Афанасьев Семен Петрович.

Комиссия члендары: Арбулиев Магомед; Бондаренко Алексей Дмитриевич; Гаркушенко Константин Григорьевич; Гусев Михаил Ильич; Жуков Иван Иванович; Лялин Павел Николаевич; Непомнющая Наталия Дмитриевна; Опутин Геннадий Георгиевич; Сараев Тимофей Евдокимович; Светлаков Николай Иванович; Ситнянский Дмитрий Федосьевич; Слойковский Захар Филиппович; Сурин Петр Васильевич; Уваров Александр Михайлович; Филимонов Донат Кириллович; Цыдынжапов Гомбожап Цыцыжапович; Шаханов Василий Максимович; Шведова Зоя Дмитриевна.

Архангельск, Курган, Ульяновск һәм Чкалов өлкәләре депутаттары группаһынан сығып һөйләгән депутат Г. А. Денисов тәҡдиме буйынса РСФСР Верховный Советы 9 кеше составында сит ил эштәре буйынса Комиссия һайланы:

Комиссия председателе — Ильичев Леонид Федорович.

Комиссия члендары: Зинченко Василий Емельянович; Кузнецов Федор Васильевич; Логинов Савелий Прохорович; Лыкова Лидия Павловна; Носенков Александр Васильевич; Опарин Александр Иванович; Романова Мария Михайловна; Сурков Алексей Александрович.

Комиссияларҙы һайлағандан һуң председатель, РСФСР Верховный Советының киләһе ултырышы 14 апрелдә кискә 6 сәғәттә буласаҡ, тип белдерҙе.

Шуның менән РСФСР Верховный Советының беренсе ултырышы ябылды.

Баҫыу эштәре көндәлеге

Механизаторҙар ярышы

Өфө районы Дмитриевка МТС-ы механизаторҙары араһында май алды социалистик ярышы киң йәйелдерелде. Бригадалар һәм айырым механизаторҙар үҙ өҫтәренә конкрет йөкләмәләр алдылар.

МТС партия ойошмаһы механизаторҙарының социалистик ярышта алған йөкләмәләрен үтәүҙә практик ярҙам күрһәтә. Яуаплы участкаларға эште ойоштороуға һәләтле булған коммунистарҙы билдәләй, социалистик ярыштың барышына етәкселек итә һәм алынған йөкләмәләрҙең үтәлешен системалы тикшереп бара.

Коммунист Иван Букарев етәкселек иткән бригада социалистик ярышта алдынғы сафта бара. Был бригада члендары 15 ат көсө һәр бер тракторға 1000-әр гектар ер һөрөргә, бөртөклө ашлыҡ культуралары буйынса һәр гектарҙан уртаса 100-әр бот урожай алыуҙы тәьмин итергә, ауыл хужалығы машиналарын социалистик һаҡлыҡҡа алырға, һәр 15-се көндә экономияланған яғыулыҡ менән эшләргә һәм ер һөрөүҙең үҙенә төшөү хаҡын һәр гектарға 1 һумға кәметергә йөкләмә алдылар.

Х. Әбүзәров,
директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары.

Юғары урожай өсөн көрәш

Миәкә районының игенселәре ҙур бер әҙерлек һәм ойошҡанлыҡ менән ҡар һыуҙары тотоуға, арыш сәселгән майҙандарҙы өҫтәмә аҙыҡландырырға башланылар.

Май алды социалистик ярышына ҡушылып, стахановсы вахтаға баҫҡан Чапаев исемендәге колхоз члендары гүзәл эш өлгөләре күрһәтәләр. Бында һәр көндә баҫыуға 150 — 160 кеше ҡар һыуҙары тотоурға һәм арыштарҙы өҫтәмә аҙыҡландырырға сығалар.

Ярышта юғары урожай үҫтереү мастеры Василий Самойлов етәкселек иткән беренсе номерлы баҫыусылыҡ бригадаһы алда бара. Был бригаданың члендары ҡар һыуҙары тотоу планын арттырып үтәне, 50 гектар майҙандағы ужымдарҙы өҫтәмә рәүештә аҙыҡландырҙылар.

Улар көл, ҡош тиҙәге һәм минераль ашламаларҙы киң ҡулланалар.

Каганович исемендәге колхоздың члендары ла тәүге көндәрҙә үк юғары эш күрһәткестәре бирҙеләр.

Улар эш планында күрһәтелгән сроктан ике көн алда ҡар һыуҙары тотоуҙы тамамлап, арыш сәселгән ерҙәрҙе өҫтәмә аҙыҡландыра һәм тырмата башланылар.

Райондағы колхоздарға 4 мең гектарҙан артыҡ майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо ла инде.

Х. Сафин.

* * *

Саҡмағош. (Телефон аша). Районды колхоз баҫыуҙарында 6 мең гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо, 3.800 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Калинин, Куйбышев исемендәге, «I коммуна», «Холодный ключ» колхоздары ҡар һыуҙары тотоу буйынса планды үтәнеләр. «Йәштәр», «Боған», «Баязит» колхоздары 170 — 200 гектар ужым аҙыҡландырҙылар.

«II коммуна» һәм Ворошилов исемендәге колхоздарҙа күҙҙән һерелгән баҫыуҙарҙа ерҙе һайлап тырматыу эштәр башланды.

Х. Ғәлимов.

* * *

Ҡырмыҫҡалы. Райондың колхоздары быйыл яҙғы баҫыу эштәренә, үҙған йылға ҡарағанда, яҡшыраҡ, ойошҡаныраҡ әҙерләнделәр. Бында район буйынса мең гектарҙан артыҡ майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо һәм 759 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Шаймуратов исемендәге колхоз ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу планы арттырып үтәүгә өлгәште. Шулай уҡ Калинин исемендәге колхоз да планды үтәү алдында тора.

Шаймуратов исемендәге колхоздың баҫыусылыҡ бригадаһында ла күҙ һерәгән ерҙәрҙе тырматыуға башланылар. Шулай уҡ Буденный, Калинин исемендәге колхоздар ҙа тырматға төштөләр.

* * *

Балтас. (Телефон аша). Районды колхоз баҫыуҙарында юғары урожай өсөн көрәш киң йәйелдерелде. Күпселек колхоздар тәүге мөмкинлектәр тыуыу менән үк ҡар һыуҙары тотоуға, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуға һәм тырматыуға башланылар.

Сталин, Киров, Куйбышев, Маленков һәм Молотов исемендәге колхоздарҙа баҫыу эштәре айырыуса ойошҡанлыҡ менән башланды. Бер нисә көн эсендә генә был колхоздарҙа 350 — 400-әр гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо һәм йөҙәрләгән гектар майҙанда ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелде.

Ә. Киреев.

Иван Бунеев өлгөһө буйынса

Стәрлетамаҡ. Михайловка МТС-ының механизаторҙары, Иван Бунеевтең инициативаһын хуплап, тракторҙарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алдылар. Бөтә эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу һәм сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн социалистик ярышҡа сыҡтылар.

Иптәш Мурыжников етәкселек иткән трактор бригадаһы үҙе хеҙмәтләндергән Свердлов исемендәге колхозда үҙған йыл 980 гектар майҙандың һәр бер гектарынан уртаса 18,6 центнер урожай алғайны. Алдынғы тракторист иптәш Мокеев, сезонда 1033 гектар ер эшкәртеп, 1492 килограмм яғыулыҡҡа һәм 6050 һум аҡсаға экономия яһағайны. Был алдынғы тракторсистарҙың эш тәжрибәләре быйыл МТС эргәһендә ойошторолған тракторсистар курсында ентекләп өйрәнелде. Махсус курстарҙа 130 тракторист һәм 4-5 көнлөк курстарҙа прицепщиктар әҙерләнде. Сәсеү осоронда МТС-тың бөтә тракторҙары ла ике смена эшләйәсәктәр.

МТС дирекцияһы тракторҙарҙың өҙлөкһөҙ эшләүҙәрен ойоштороу маҡсатында производство планын трактор бригадаларына еткереү менән генә сикләнмәне, ә һәр бер трактор һәм сәскес өсөн көндәлек эш нормалары билдәләп, уларҙы һәр бер тракторисҡа еткерҙе.

Быйыл айырым бригадалар ғына түгел, МТС-тағы бөтә 14 бригада ла сәғәт графигы буйынса эшләйәсәк. Трактор бригадаһы бригадиры иптәш Мурыжников сәғәт графигы индереүҙең инициаторы булып тора. Трактор бригадалары иртә культураларҙы сәсеүҙе 5 эш көнөндә юғары агротехник кимәлдә үткәрергә, сезонға 30 тонна яғыулыҡҡа һәм ремонтҡа 46 мең һум аҡсаға экономия яһарға йөкләмә алдылар.

Профсоюз активының Өфө ҡала йыйылышы

Ошо көндәрҙә профсоюз активының Өфө ҡала йыйылышы булды. Унда профсоюз ойошмаларында булып үткән отчет-һайлау йыйылыштарының һәм конференцияларының йомғаҡтары һәм алдағы бурыстар тураһында доклад менән Башпрофсовет секретары иптәш Фокин сығыш яһаны.

Доклад буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашыусыларҙан иптәш Мартыненко (Яҙыу машиналары заводының профсоюз комитеты председателе) Башпрофсоветты профсоюз ойошмаларына йомшаҡ етәкселек иткәне өсөн тәнҡитләне.

— Беҙгә, — тине ул, — Башпрофсовет работниктарының бер ваҡытта ла булғаны юҡ. Беҙҙең ойошмаға хеҙмәтте һаҡлау һәм культура эштәрен яҡшыртыу буйынса ярҙам кәрәк. Башпрофсоветҡа был турала бер нисә тапҡыр белдерелһә лә, ул һаман мәсьәләне хәл итеү тураһында уйлап та бирмәй.

Телефон аппаратуралары заводының токаре иптәш Логинов заводта рационализаторҙарҙың йәҙҙән дә артыҡ тәҡдимен күп айҙар буйына ҡарамай ятҡырыуҙары тураһында һөйләне.

— Был хәлгә, — тине ул, — заводтың профсоюз комитеты ла, партия ойошмаһы ла күпселек ҡарайҙар.

Журавлева, Филиппов, Баишев һәм башҡа иптәштәр Башпрофсоветтең эшендәге күп кенә етешһеҙлектәргә туҡталдылар һәм үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Май алды социалистик ярышы

ЙЫЛЫНА 100 МЕҢ ҺУМ ЭКОНОМИЯ

Урындағы промышленностең Өфө ҡалаһындағы металл штамплау заводы эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре оборудованиеларҙы, станоктарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн практик эш алып баралар.

Элек заводта металл штамплай торған престың «собачка» детале 23 сәғәт эшләгәс тә сафтан сыға ине. Һынған «собачка»ны алмаштырыу өсөн престы 20-25 сәғәт туҡтатып, маховиген алырға тура килә ине. Был деталде яңынан эшләү өсөн 30 — 40 килограмм юғары сифатлы ҡорос кәрәк була һәм 8-10 сәғәт ваҡытты талап итә ине. Механика цехының мастеры Виндушев һәм слесарь Косторев иптәштәр уралмашзаводы алдынғы эшселәре өлгөһөндә, был престы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу маҡсатында, уның конструкцияһын үҙгәртеп, ремонт эштәрен тиҙләтеү һәм ҡоросҡа экономия яһау өсөн «собачка» менән «палец» деталдәрен айырым яһап, престарға беркетеү юлын ҡулайлаштырҙылар.

Был деталдәрҙе айырым етештереп беркетеү һөҙөмтәһендә, престағы буш тороу бөтөрөлдө һәм ул хәҙер бөтә ҡеүәтендә эшләй башланы. Был рационализаторлыҡ тәҡдиме заводҡа йылына 100 мең һумға яҡын экономия бирә.

Р. Сафин.

ПЛАНДАН ТЫШ ПРОДУКЦИЯ

«Башнефтестрой» тресы предприятиелары араһында бетон заводы коллективы алдынғылар сафында һанала. Ул 1 квартал планын 200 процентҡа үтәне. Бында бөтә эшселәр ҙа май алды социалистик ярышы менән солғап алынғандар.

Бетон етештереү цехы эшселәренән Имамутдинова, Овчинникова, Исәнбаева, Солтанова һәм башҡа иптәштәр май алды ярышының тәүге көндәренән үк уңышлы эшләп, айырыуса яҡшы күрһәткестәр бирәләр. Слесарь Васильев, моторисҭарҙан Мохова һәм Глухова иптәштәр оборудованиеларҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн ярышалар. Заводта бөтә оборудованиеларҙы ла эшселәр социалистик һаҡлыҡҡа алғандар. Стахановсы вахтала эшләп, коллектив 1 Май хөрмәтенә пландан тыш 200 мең кубометр бетон һәм 350 кубометр иҙелмә эшләп сығарырға йөкләмә алды.

Ш. Мостафин,
«Башнефтестрой» тресы инженеры.

Дәүләкән районы Хрущев исемендәге ереләтелгән колхоз баҫыуҙары ҡарҙан асылғас та колхозсылар ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландыра башланылар. Бер нисә көн эсендә генә бында йөҙәрләгән гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Һүрәттә (уңда): 5-се номерлы баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры П. Ф. Некрытов һәм колхоз председателе А. С. Черниченко иптәштәр. Бригадир үҙ участкаһында аҙаҡҡы гектар ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу тураһында председателгә мәғлүмәттәр бирә.

А. Червинский фотоһы.

1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджете тураһында һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетенең үтәлеше тураһында

РСФСР Финанс министре депутат И. И. ФАДЕЕВТЕҢ доклады

Депутат иптәштәр! РСФСР Верховный Советенең беренсе сессияһы массаларҙың коммунистик общество төҙөүҙә Бөйөк Тыуған илебеҙҙең яңы еңеүҙәре менән тыуҙырылған политик һәм хеҙмәт активлегенең жәүәтле күтәрелеүе шарттарында йыйылды.

Тыныс ижади хеҙмәт менән шөғөлләнеүсе совет халҡы Бөгөнгө һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ план бурыстарын уңышлы үтәне. Совет кешеләре большевиктәр партияһы һәм Совет Хөкүмәте етәкселегендә ҡыҫҡа срок эсендә промышленностең һәм ауыл хужалығының һуғышҡа тиклемге кимәлен алға баҫтырҙылар һәм был кимәлдең байтаҡ күләмдә арттырылыуын тәьмин иттеләр.

Хәҙерге ваҡытта беҙҙең илебеҙҙә тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсә грандиоз планын тормошҡа ашырыу буйынса эштәр әлеһен-әле киңерәк йәйелдерелә. Совет халҡы ғәйәт ҙур рух күтәренкелеге менән Куйбышев, Сталинград һәм Каховка гидроэлектростанцияларын, Төп Төркмәнстан каналын, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡырым каналдарын һәм судноҙар йөрей торған Волга—Дон каналын — коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен төҙөүҙе тормошҡа ашыра.

Социалистик экономиканың өҙлөкһөҙ күтәрелеүе нигеҙендә СССР-ҙың милли доходы арта, хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күреше яҡшыра, массовый ҡулланыу тауарҙарының хаҡтары арзаная бара.

Илебеҙҙә тауар хаҡтарының систематик рәүештә арзанайыуы совет кешеһе тураһында арымай-талмай сталинсә хәстәрлек күреүҙең иҫбатлауы булып хеҙмәт итә һәм шуның менән бергә Советтар Союзының тыныс тышҡы политикаһын иҫбат итеүсе ышаныслы дәлил булып тора.

Еңеүле рәүештә коммунизм төҙөү, хеҙмәтсәндәрҙең көн-күреше һәм культураһын күтәреү тураһында бөйөк сталинсә хәстәрлек совет обществоһының мораль-политик берҙәмлеген һәм СССР халыҡтарының дуҫлығын тағы ла күберәк нығытыуға килтерҙе.

Союзный һәм автономиялы республикаларҙың Верховный Советтарына күптән түгел булып үткән һайлауҙар совет халҡының коммунизм эшенә сикһеҙ бирелгәнлеген, социалистик Ватанды артабан нығытыу өсөн фиҙакәр хеҙмәт итергә уның әҙер торғанлығын һәм һуғышты булдырмау өсөн һәм тыныслыҡты һаҡлау өсөн гениаль юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ иптәш Сталин етәкселегендә көрәшергә тайпылышһыҙ рәүештә ҡарар иткәнлектәрен яңынан айырыуса ҙур көс менән бөтә донъяға күрһәтте! (Оҙаҡ дауам иткән көслө ҡул сабыуҙар).

РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетенең үтәлеш йомғаҡтары

Депутат иптәштәр! Россия Федерацияһының халыҡтары жәүәтле Советтар Союзының бөтә туғандаш халыҡтары менән берлектә экономиканы һәм культураны үстереүҙә ҙур уңыштарға өлгәштеләр.

РСФСР-ҙың республикан һәм урындағы промышленносе 1950 йылда йыллыҡ планды 102 процентҡа үтәне һәм киң ҡулланыу тауарҙары, төҙөлеш һәм ағас материалдары, шулай уҡ башҡа төрлө продукцияны етештереү байтаҡ артты. Промышленность предприятиелары ассортиментте киңәйттеләр һәм эшләп сығарыла торған изделиеларҙың сифатын яҡшырттылар.

Социалистик ауыл хужалығы тайпылышһыҙ күтәрелеү юлы менән бара. РСФСР-ҙың колхоздары һәм совхоздары 1950 йылда бөтә культураларҙың сәсеү майҙанын 5,8 миллион гектарға арттырҙылар. 1950 йылда барлыҡ ашлыҡ культураларының урожайы һуғышҡа тиклемге кимәлдә үтеп китте.

Общественный малсылыҡты үстереү буйынса өс йыллыҡ план уңышлы үтәлә. РСФСР-ҙың Европа өлөшөндәге иген һәм урман-иген райондарында һуңғы йылдарҙа 860 мең гектарҙан артыҡ майҙанда ағаслыҡ һаҡлаусы ағас ултыртылды һәм сәселде.

Промышленность һәм ауыл хужалығы производствоһының үҫеүе менән бергә республика хеҙмәтсәндәренең торлаҡ шарттары өҙлөкһөҙ яҡшыра бара. Торлаҡ төҙөлеше йылдан-йыл арта. 1950 йылда РСФСР-ҙа государство предприятиелары, учреждениелар һәм урындағы Советтар тарафынан, 1949 йылғыға ҡарағанда, 11 процентҡа артыҡ яңы торлаҡ майҙаны файҙаланыуға индерелде. Электр станцияларын, водопроводтарҙы һәм башҡа коммуналь предприятиеларҙы, трамвай, троллейбус һәм автобус хәрәкәтен алға баҫтырыу һәм киңәйтеү буйынса, шулай уҡ ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр башҡарылды.

1950 йылда совет сауҙаһын артабан үҫтереү дауам итте. Халыҡҡа государство һәм кооператив сауҙаһы магазиндарында, 1949 йылға сағыштырғанда, 30 процентҡа артыҡ тауар һатылды.

Үткән йыл алдынғы совет фәненең һәм культураһының яңы сәскә атыу йылы булды. Халыҡ мәғарифе өлкәһендә бик ҙур уңыштарға өлгәшелде. Башланғыс, ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәрҙә, техникумдарҙа һәм башҡа урта уҡыу йорттарында РСФСР территорияһында 1950 йылда 20,6 миллион кеше һәм 502 юғары уҡыу йортонда, ситтән тороп уҡыусыларҙы ла индереп — 687 мең студент уҡыны.

1950 йылда республикала больницалар, бала тыуҙырыу йорттары һәм башҡа төрлө дауалау учреждениелары селтәре, шулай уҡ санаторийҙар һәм ял йорттары селтәре киңәйтелде.

Халыҡ хужалығы планының уңышлы үтәлеүе менән бер рәттән социалистик накопление лар ҙа артты, был совет финансының артабан нығыуына булышлыҡ итте.

РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджете доходтар буйынса 53.698 миллион һум һәм расходтар буйынса 53.200 миллион һум суммала, доходтарҙың расходтарға ҡарағанда, 498 миллион һумға артылыуы менән үтәлде.

Республика бюджетенә обороттан алына торған налогтарҙан отчисленнелар буйынса 10.931 миллион һум аҡса инде.

Государство предприятиелары һәм хужалыҡ ойошмалары табыштарынан отчисленнелар буйынса план арттырып үтәлде. Был сығанаҡтан 9.461 миллион һум, 1950 йылғы бюджет буйынса раҫланған суммаға ҡарағанда, 466 миллион һумға һәм, 1949 йылғыға сағыштырғанда, 1.616 миллион һумға артыҡ аҡса инде.

Ләкин шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, тотош алғанда табыштарҙан отчисленнелар буйынса план арттырып үтәлһә лә, РСФСР-ҙың ҡайһы бер министерстволары, атап әйткәндә, Урман промышленносе министерствоһы, Урындағы яғыулыҡ промышленносе министерствоһы, Ит һәм һөтсәлек промышленносе министерствоһы, Граждандар торлаҡ төҙөлеше министерствоһы һәм Сауҙа министерствоһы бюджет алдында үҙҙәренең бурыстарын үтәмәнеләр. Юғарыла күрһәтелгән министерстволар хужалыҡ иҫәбен һәм үҙҙәренә буйһонған предприятиеларҙағы финанс дисциплинаһын нығытыу өсөн етерлек тиклем сара күрмәнеләр.

Государство заемдарынан отчисленнелар планы арттырып үтәлде. Үҙған йылда государство заемдарынан отчисленнелар 7.385 миллион һум суммала — 1949 йылғыға ҡарағанда, 668 миллион һумға артыҡ инде.

Бюджетҡа халыҡтан алына торған налогтар һәм йыйымдар буйынса 11.661 миллион һум аҡса инде. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, ҡайһы бер крайҙарҙың һәм өлкәләрҙең финанс органдары үҙҙәренең ҡәнәғәтләнерлек эшләмәүҙәре һөҙөмтәһендә налогтар планын үтәмәнеләр. Атап алғанда, был план Краснодар крайында, Орел, Брянск, Смоленск, Новосибирск, Омск, Тамбов һәм Воронеж өлкәләрендә үтәлмәне.

РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетенең расходтары, юғарыла күрһәтелгәнсә, 53.200 миллион һум тәшкил итте. Был сумманан халыҡ хужалығын финанс менән тәьмин итеүгә 10.539 миллион һум — бюджет менән күҙҙә тотолғанға ҡарағанда 262 миллион һумға артыҡ тотолдо. Социаль-культура сараларына тотолған расходтар 36.916 миллион һум тәшкил итте. Государствоның идара итеү органдарын тотоуға 4.833 миллион һум, йәки 1950 йылға раҫланған суммаға ҡарағанда, байтаҡ кәм аҡса тотолдо.

РСФСР-ҙың Государство бюджете хужалыҡты, культураны үстереү һәм халыҡтың көн-күрешен яҡшыртыу буйынса халыҡ хужалығы планында күҙҙә тотолған сараларҙы кәрәкле аҡсалар менән тәьмин итте.

1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджете

Депутат иптәштәр! 1951 йылға государство халыҡ хужалығы планы менән беҙҙең республикабыҙ алдына республиканың һәм урындағы хужалыҡтың бөтә тармаҡтарын артабан үстереү буйынса яңы бурыстар ҡуйылды. Быйыл промышленностең һәм ауыл хужалығының яңынан байтаҡ үҫеүенә өлгәшелергә, капиталь төҙөлеш буйынса ҙур эштәр үткәрергә һәм хеҙмәтсәндәрҙең материаль һәм культура кимәлен артабан үстереү сараларының киң программаһы тормошҡа ашырылырға тейеш.

Беҙҙең ҡарамағыбыҙға индерелгән РСФСР-ҙың Государство бюджете ошо иң мөһим бурыстарҙы уңышлы хәл итеүгә йүнәлтелгән.

1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджете күләмә РСФСР Министрҙар Советы тарафынан доходтар буйынса 54.179 миллион һум һәм расходтар буйынса 54.136 миллион һум суммала, доходтар расходтарға ҡарағанда 43 миллион һумға артырып билдәләнгән.

РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджетенең доходтары

Государство бюджетенең доходтары түбәндәге төп сығанаҡтарҙан барлыҡҡа килтерелә (миллион һумдарҙа):

социалистик хужалыҡтан алынасаҡ керемдәр	30.518
государство налогтарынан отчисленнелар	13.444
государство заемдарынан отчисленнелар	8.120
ҡалған доходтар	2.097

Социалистик хужалыҡтан алынасаҡ 30.518 миллион суммалағы керемдәр, шул иҫәптән государство предприятиеларенең табыштарынан 8.339 миллион һум отчисленнелар һәм обороттан алынасаҡ налогтарҙан 9.011 миллион һум отчисленнелар РСФСР Государство бюджете доходтарының төп сығанағы булып тора.

Быйыл накоплениелар планын үтәү хеҙмәт етештереүсәнлегенең артабан күтәрелеүҙә, етештереүҙә материаль тотоноуҙарға экономия яһауҙы көсәйтеүҙә, төп средстволарҙы файҙаланыуҙы яҡшыртыуҙы, шулай уҡ башҡа бөтә резервтарҙы асыуҙы һәм файҙаланыуҙы талап итә.

Республикала продукцияның үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу буйынса етештереү пландарын һәм заданиеларен үтәмәүсе предприятиелар ҙа бар әле. Урман промышленносенда шундай предприятиелар күп.

Пландарҙы үтәмәүсе предприятиелар РСФСР-ҙың башҡа министерстволарында ла, шул иҫәптән, мәҫәлән, Еңел промышленность министерствоһы, Аҙыҡ промышленносе министерствоһы һәм Урындағы промышленность министерствоһы кеүек 1950 йылда етештереү программаһын тотош алғанда үтәгән министерстволарҙа ла бар.

Ҡайһы бер министерстволар һәм ведомстволар продукцияның ассортименте һәм сифаты буйынса заданиеларҙе үтәмәнеләр. Урындағы промышленность министерствоһы фарфор-фаянс һауыт-һабаларының айырым төрҙәрен һәм йорт кәрәк нәмәләрен етештереү буйынса, РСФСР Ит һәм һөтсәлек промышленносе министерствоһы юғары сортлы мал майы етештереү буйынса заданиеларҙе үтәмәне. Был хәл промышленность предприятиеларенең накоплениеларен кәметеүгә һәм бюджетҡа юғалтыуҙар яһауға килтерҙе.

Государство планы закон булып тора. Министерстволарҙың һәм хужалыҡ ойошмаларының етәкселәре бөтә шарттарҙа ла етештереү заданиеларен тотош буйһын, шулай уҡ продукцияның ассортименте һәм сифаты буйынса ла үтәүҙе тәьмин итергә тейештәр. Беҙҙең предприятиеларебеҙҙе байыҡтырған яңы техниканы файҙаланыуҙы яҡшыртыу был бурыстарҙы үтәү өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булып тора.

РСФСР Верховный Советенең үткән сессияһында Республика Урман промышленносе предприятиеларенең механизмдарҙы тейешенсә файҙаланмауҙарына иғтибар йүнәлтелгәйне. Үткән йылдың йомғаҡтары РСФСР Урман промышленносе министре иптәш Кудрявцевтең техниканы файҙаланыуҙы яҡшыртыуға тейешле саралар күрмәүен күрһәтә. Механизмдарҙы ҡәнәғәтләнерлек файҙаланмау һәм башҡа тәртипһеҙлектәр арҡаһында 1950 йылда ағастың үҙенә төшөү хаҡы планда билдәләнгәнгә ҡарағанда байтаҡ юғары булды.

Ҡайһы бер предприятиелар сырьеға пландан тыш ҙур расходтар яһауға юл ҡуялар. РСФСР Аҙыҡ промышленносе министерствоһының Ярославль ҡалаһындағы крахмал-патока комбинаты крахмал етештергән ваҡытта былтыр 1167 тонна кукурузаны артыҡ тотондо. Күп кенә предприятиеларҙа продукцияла брак яһауҙан юғалтыуҙар ҙур әле. Атап әйткәндә, РСФСР Еңел промышленность министерствоһының быяла заводтарында быяланың ватылыуынан һәм бракҡа сығыуынан пландан тыш юғалтыуҙар 1950 йылда 2.254 мең һум, ә Урындағы промышленность министерствоһының фарфор-фаянс предприятиеларенда 3 миллион һум тәшкил итте.

Министерстволар һәм ведомстволар, урындағы Советтарҙың башҡарма комитеттәре продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү буйынса 1951 йылға билдәләнгән государство заданиеһен һис һүҙһеҙ үтәү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр. Һәр бер предприятиеның етәксеһе предприятие эшмәкәрлегенең экономикаһын продукцияның үҙенә төшөү хаҡы һәм табыштар буйынса пландарҙың һис һүҙһеҙ үтәлеүенә йүнәлтергә бурыслы.

РСФСР Государство бюджетенең доходтарында обороттан алынасаҡ налогтарҙан отчисленнелар ҙур статья булып торалар. Обороттан алынасаҡ налог буйынса государство заданиеларен уңышлы үтәү өсөн продукция етештереү планын тулыһынса һәм арттырып үтәү һәм уны тиҙерәк үткәреп бөтөреү өсөн кәрәкте бөтә икелән көсәйтергә кәрәк.

Шуны билдәләргә кәрәк, беҙҙә әле обороттан алынған налогты үҙ ваҡытында түләүҙе тәьмин итмәүсе предприятиелар ҙа бар. Улар иҫәбенә Тобольскиҙәге ит комбинатын индерергә мөмкин. Был комбинат үҙенең финанс йөкләмәләрен айҙан-айға үтәмәй килә. Обороттан алынған налог буйынса комбинаттың недоимкаһы 1951 йылдың апрель айына 1 миллион 213 мең һум тәшкил итте.

Бындай етешһеҙлектәр менән килешергә ярамай. Хужалыҡ ойошмаларының етәкселәренән государство алдындағы финанс йөкләмәләрен үҙ ваҡытында һәм тулыһынса үтәүҙе талап итергә кәрәк. Финанс органдары обороттан алынған налогтың түләнеләүенә контролде көсәйтергә һәм государствоның түләү дисциплинаһын боҙоуға ҡаршы килешмәүсән көрәш алып барырға тейештәр.

Совет сауҙаһын артабан яҡшыртыу беренсе дәрәжәләге әһәмиәткә эйә булған бурыс булып тора. Республиканың сауҙа ойошмалары һатып алыусыларҙы хеҙмәтләндереүҙе яҡшырттылар. Ләкин уларҙың эшендә етешһеҙлектәр күп әле.

Ҡайһы бер сауҙа ойошмалары сауҙаны күтәреү өсөн иңғай шарттарҙың булыуына ҡарамаҫтан, тауар әйләнеше планын үтәмәйҙәр. РСФСР Сауҙа министерствоһы һәм Центросоюз тауарҙарҙы өлкәләргә һәм райондарға, урындағы шарттарҙы һәм айырым тауарҙарға халыҡтың талабын иҫәпкә алмайынса, механик бүлеү ғәҙәттәрен әле булһа бөтөрмәгәндәр.

Айырым өлкәләрҙә тауарҙар базаларҙа һәм складтарҙа оҙаҡ ятҡалар. Ульяновск өлкәһенең потребителдәр кооперацияһының 1.239 магазинына һәм ларегына, государство сауҙаһының 115 магазинына үткәрелгән тикшереү сауҙа базаларында һәм складтарында булған ҡайһы бер тауарҙарҙың тикшерелгән күп кенә магазиндарҙа һәм ларектарҙа һатыуға сығарылмағанлығын күрһәтте.

Сауҙа ойошмаларының финанс хужалығында ла күп кенә тәртипһеҙлектәргә юл ҡуйыла. Краснодар крайының һәм Тула өлкәһенең сауҙа ойошмалары буйынса хужаһыҙлыҡ арҡаһында барлыҡҡа килгән юғалтыуҙар һәм артыҡ тотоноуҙар 1949 йылға ҡарағанда артҡан. Свердловск өлкәһенең сауҙа ойошмалары ла 16,0 миллион һумлыҡ, Чкалов өлкәһенең — 12,6 миллион һумлыҡ һәм Дондағы Ростов ҡалаһының сауҙа ойошмалары — 8,4 миллион һумлыҡ артыҡ тотоноуҙарға һәм ҙур юғалтыуҙарға юл ҡуйғандар.

РСФСР Сауҙа министерствоһы тауар әйләнешенең 1951 йылға билдәләнгән планын үтәүҙе тәьмин итергә, һатып алыусыларҙы хеҙмәтләндереүҙе артабан яҡшыртыуға өлгәшергә һәм сауҙа ойошмаларының финанс-хужалыҡ эшмәкәрлегендәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә тейеш.

Промысловой кооперация валовой продукция етештереүҙең һуғышҡа тиклемге кимәлен 1948 йылда уҡ уҙып китте. 1950 йылда промысловой кооперация етештереү планын 101 процентҡа үтәне һәм халыҡ өсөн пландан тыш бик күп һанда төрлө тауарҙар етештерҙе.

Шул уҡ ваҡытта шуларҙы билдәләргә кәрәк, промысловой кооперацияның күп кенә артелдәре план заданиеларен үтәмәйҙәр әле. Владимирск өлкәһендә, мәҫәлән, 127 артелдең 49-ы былтыр етештереү программаһын үтәмәне. Куйбышев ҡалаһында, Молотов өлкәһендә, Краснодар крайында һәм Төньяҡ Осетия АССР-ында промысловой кооперация артелдәренең яртыһынан күберәге етештереү заданиеларен үтәмәнеләр.

Кострома өлкәһендә промысловой кооперация артелдәре киң ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе арттырыу өсөн урындағы сырьены һәм промышленность отходтарын тейешенсә файҙаланмайҙар. Промысловой кооперация тарафынан эшләп сығарылған дейәм продукцияның өстән бер өлөшө самаһы ғына урындағы сырьенан етештерелә.

Совет Государствоһы промысловой кооперацияға ҙур ярҙам күрһәтә, уның материаль-техник базаһын нығыта, предприятиеларен яңы техника менән байыҡтыра.

Яңы техниканы файҙаланыу, шулай уҡ производство экономикаһы мәсьәләләренә промысловой кооперация артелдәренең һәм союздарының иғтибарын көсәйтергә кәрәк. Һәр бер артелдә ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу серьез бурыс булып тора. Промысловой кооперация эшен яҡшыртыу халыҡҡа миллион һумдарға өҫтәмә тауар бирәсәк һәм Государство бюджетенең доходтарын арттырыуға булышлыҡ итәсәк.

Государство заемдарынан отчисленнелар Республика бюджетында мөһим роль уйнайҙар. СССР халыҡ хужалығын алға баҫтырыу һәм үстереүҙең бишенсе Государство заемына подписка заем таратыу өсөн билдәләнгән суммадан байтаҡ артыҡ булды. Беҙҙең заемдарыбыҙҙың уңышы хеҙмәтсәндәрҙең материаль тәьмин ителгәнлегенең үҫеүен, совет халҡының юғары патриотизмын һәм Советтар Союзының ҡеүәтен үҙ хеҙмәттәре менән генә түгел, бәлки личный средстволары менән дә нығытырға уның әҙер тороуын күрһәтә.

Һаҡлыҡ кассаларына халыҡ вкладтарының тайпылышһыҙ артыуы ла халыҡтың көн-күрешенең күтәрелеүе тураһында һөйләй.

РСФСР-ҙың финанс органдары халыҡтан алынасаҡ налогтан һәм башҡа түләүҙән керемдәр планын һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итергә һәм ауылдарҙа түләүҙәрҙе йыйыу буйынса налог агенттәренең эшен яҡшыртыуға кәрәкле саралар күрергә тейештәр. Шул уҡ ваҡытта урындағы Советтар башҡарма комитеттәренең был эшкә иғтибарын көсәйтеү талап ителә.

РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджетенең расходтары

РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджетенең расходтары, юғарыла әйтелгәненсә, 54.136 миллион һум суммала билдәләнелгән. Улар үткән йылға ҡарағанда, 936 миллион һумға артыҡ.

Расходтар айырым статьялар буйынса түбәндәге суммаларҙа билдәләнелгән (миллион һумдарҙа):

халыҡ хужалығы	10.235
социаль-культура саралары	38.318
государство идараһы органдарын һәм суд органдарын тотоу	4.947
башҡа расходтар	636

Шулай итеп, 1951 йылда, элекке йылдарҙағы кеүек уҡ, халыҡ хужалығына һәм социаль-культура сараларына РСФСР Государство бюджетенең бөтә средстволарының ундан туғыҙ өлөшө тиерлек һалына.

Был ғәйәт ҙур средстволарҙы ҙур экономия һәм һаҡлыҡ менән файҙаланырға кәрәк. Министерстволар, ведомстволар һәм урындағы Советтарҙың башҡарма комитеттәре иптәш Сталиндең, «халыҡ байлығының бер генә тиене лә бушҡа китмәһен өсөн тупланған резервтарҙы аҡыл менән файҙаланыуға, иҫәпләп кенә тотона белергә кәрәк...» тигән күрһәтмәһен тайпылышһыҙ ҡулланырға тейештәр.

Халыҡ хужалығын финансировать итеү

Халыҡ хужалығы планы менән ҡаралған бурыстарға ярашлы рәүештә, республика һәм урындағы промышленносте финансировать итеүгә 1094 миллион һум, торлаҡ-коммуналь хужалыҡты финансировать итеүгә — 3482 миллион һум, ауыл һәм урман хужалығына — 4112 миллион һум һәм халыҡ хужалығының башҡа тармаҡтарын финансировать итеүгә 1547 миллион һум аҡса бүленгән.

Халыҡ хужалығын финансировать итеүгә ассигнованиеларҙың байтаҡ өлөшө, атап әйткәндә, 4773 миллион һум аҡса капиталь төҙөлешкә һалына. Капитал һалымдарҙың дөйөм күләме 1951 йылға 6025 миллион һум суммала билдәләнелгән.

1950 йылда Хөкүмәт төҙөлештең үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Был ҡарарҙы үтәү государство средстволарына байтаҡ экономия яһауға килтерҙе.

Ләкин ҡайһы бер министерстволар һәм ведомстволар төҙөлештең үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү буйынса заданиеларҙе үтәмәнеләр. Торлаҡ-граждандар төҙөлеше министерствоһы был заданиены үтәмәне. Министерствоның күп кенә подрядный төҙөлеш-монтаж ойошмалары ҙур зыянға юл ҡуйҙылар. Мәҫәлән, «Великолукстрой» тресы 1950 йылды 3456 мең һум зыян менән тамамланы. Был трестың накладной расходтары билдәләнелгән нормаларҙан 55 процентҡа артыҡ булды.

Торлаҡ төҙөлеше халыҡ хужалығында капиталь эштәр планының мөһим өлөшө булып тора. Совет государствоһы торлаҡ төҙөүселәрҙе торлаҡ төҙөлешен йылдам темптар менән алып барырға мөмкинлек биреүсе камиллаштырылған яңы техника менән ҡоралландырҙы һәм ҡоралландырыуҙы дауам иттерә.

Ләкин торлаҡ төҙөлеше байтаҡ урындарҙа тейешенсә алып барылмай. Ҡайһы бер өлкәләрҙә, атап әйткәндә, Төмән һәм Иркутск өлкәләрендә был мөһим эшкә етерлек иғтибар бирелмәй, шуға күрә уларҙа торлаҡ төҙөлеше һәм торлаҡ майҙанын эксплуатацияға тапшырыу пландары үтәлмәй.

Торлаҡ төҙөлеше беҙҙең халҡыбыҙҙың материаль көн-күрешен артабан күтәреү эшендә иң мөһим сараларҙың береһе булып тора. Урындағы Советтарҙың башҡарма комитеттәре яңы торлаҡ майҙанын хәрәкәткә индереү пландарын һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итергә һәм төҙөлеш сроктарын ҡыҫҡартыуға, уның сифатын күтәреүгә, һәм үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеүгә бөтә кәрәкле сараларҙы күрергә тейештәр.

1950 йылда Республикала торлаҡ йорттарын капиталь ремонтлау буйынса ҙур эштәр башҡарылды. 54 крайҙа, өлкәлә һәм автономиялы республикала капиталь ремонт планы тулыһынса һәм арттырып үтәлде. Приморье крайының, Рязань өлкәһенең, Төньяҡ Осетия АССР-ының ҡалаларында һәм башҡа ҡайһы бер өлкәләрҙең һәм автономиялы республикаларҙың ҡалаларында был план үтәлмәне. 1951 йылда торлаҡ йорттарын капиталь ремонтлауға ассигнование арта. Уларҙы хеҙмәтсәндәрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн максималь файҙа менән ҡулланыу өсөн бөтә саралар күрелергә тейеш.

1951 йылда етештереү һәм тауар әйләнеше күләменең үҫеүе айҡанлы РСФСР Государство бюджетында государство предприятиеларенең һәм хужалыҡ ойошмаларының үҙ оборот средстволарының артыуына 642 миллион һум суммала ассигнованиелар күҙҙә тотола. Былай тыш, предприятиелар һәм ойошмаларҙың оборот средстволары уларҙың үҙ ресурстары иҫәбенә 794 миллион һумға арта.

1950 йылда РСФСР халыҡ хужалығының оборот средстволарының әйләнеше тиҙләтелде. Был эштә РСФСР Еңел промышленность министерствоһының һәм Урындағы промышленность министерствоһының айырым предприятиелары байтаҡ һөҙөмтәләргә өлгәштеләр.

Шуның менән бер рәттән ҡайһы бер предприятиеларҙа средстволарҙың әйләнешен аҡрынайтыуға юл ҡуйылған. Айырым алғанда, Урындағы яғыулыҡ промышленносе министерствоһының Росглавторф предприятиеларенда средстволар әйләнеше, 1949 йылға ҡарағанда, 11 көнгә аҡрынайтылған. Был предприятиеларҙа тауар-материаль ҡиммәттәрҙең нормалан тыш ҡалдыҡтары артҡан, был, финанс өлкәһендә ҡыйынлыҡтар тыуҙырған, банк һәм поставщиктәр менән предприятиеларҙең иҫәп-хисаптарына кире йоғонто яһаған.

Үҙ продукцияны тиеү етештермәү аҡса средстволарының һәм материаль ҡиммәттәрҙең әйләнешен аҡрынайтыуҙың иң мөһим сәбәптәренең береһе булып тора. Был, нормалан тыш запастарҙың тупланыуына килтерә. Ленинградтағы 3-сө номерлы мебель фабрикаһы 1950 йыл буйына айҙың беренсе декадаһында үртаса алғанда продукцияның 23 процентын, икенсе декадаһында 30 процентын һәм өсөнсө декадаһында 47 процентын етештергән. Фабрикала 1951 йылдың 1 январына 789 мең һумлыҡ нормалан тыш запас булған.

Айырым предприятиеларҙың етәкселәре артыҡ һәм кәрәкмәгән материалдарҙы асыу һәм үткәреү һәм отходтарҙы файҙаланыу өсөн йомшаҡ көрәшәләр. Курскиҙәге 1-се номерлы тегеү фабрикаһында, мәҫәлән, 1951 йыл башына 393 мең һумлыҡ артыҡ һаҡланған ҡиммәттәр, башлыса туҡыма киҫәктәре булған. Шул уҡ ваҡытта кооператив промышленностең тегеү предприятиелары был отходтарға мохтаж булғандар.

Артыҡ материалдарҙы үткәреүгә ныҡлы саралар күрергә һәм тауар-материаль ҡиммәттәр запасының нормаларын предприятиеларҙың һаҡлауын ныҡлы күҙәтергә кәрәк. Оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү өсөн көрәш Республиканың бөтә предприятиеларенең мөһим бурысы булып тора.

РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджете буйынса байтаҡ средство ауыл һәм урман хужалығын артабан күтәреүгә ассигновать ителә. Был средстволар социалистик игенселекте, общественный малсылыҡты артабан үстереү һәм тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсә планын тормошҡа ашырыу буйынса халыҡ хужалығында билдәләнелгән сараларҙы тулыһынса тәьмин итәләр.

Ауыл хужалығына ассигнованиеларҙы күп кенә райондарҙа, атап әйткәндә, Дағыстан АССР-ы, Ҡырым, Грозный, Ростов, Астрахань, Чкалов өлкәләре, Ставрополь һәм Краснодар крайҙары райондарында урындағы әһәмиәткә эйә булған һуғарыу системаларын төҙөү буйынса расходтарға 91,5 миллион һум аҡса күҙҙә тотола.

Күрһәтелгән райондар өсөн был эштәрҙең серьез әһәмиәткә эйә булыуға ҡарамаҫтан, һыу хужалығының Баш управлениеһе төҙөлеш пландарын йылдан-йыл үтәмәй килә. Һыу хужалығының Баш управлениеһенән урындағы һуғарыу системаларын төҙөү буйынса эштәрҙе тамырынан яҡшыртыуҙы талап итергә кәрәк.

Социаль-культура сараларына бюджет расходтары

Социаль-культура сараларына расходтар РСФСР Государство бюджете расходтарының төп статьялары булып тора. Республиканың 1951 йылға бюджетенда уларҙың үҙәл ауырлығы 70,8 процент тәшкил итә.

Совет государствоһы халыҡ мәғарифенә аҡсаны ҡыҙғанмай. Быйыл РСФСР-ҙың Государство бюджете халыҡ мәғарифе ихтыяждарына 21.958 миллион һум билдәләнә. Был сумманың яртыһынан күберәге — 11.568 миллион һумы мәктәптәрҙе тотоуға билдәләнә.

1951 йылда ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәр селтәре артабан арттырыла. Бөтә халыҡ хасталеге менән солған алынған совет мәктәбе ҙур уңыштарға өлгәште. Мәктәп балаларына тәрәнерәк һәм нығыраҡ белем бирелә башланы. Быйыл уҡытыу сифатын артабан күтәреүҙе тәьмин итергә кәрәк.

Ауыл ерҙәрендә йәшәүсе бөтә балаларға ете йыллыҡ белем алыу мөмкинлеге биреү өсөн мәктәп интернаттарының урын һаны арттырыла.

РСФСР-ҙың халыҡ хужалығы һәм культура төҙөлеше өсөн кадрҙар әҙерләүгә 3.152 миллион һум аҡса билдәләнә. 1951 йылда республиканың вуздарынан һәм техникумдарынан 160,7 мең яңы йәш специалист әҙерләп сығарыласаҡ.

Балалар баҡсаларын һәм балалар йорттарын тотоуға ҙур ассигнованиелар — 3.711 миллион һум билдәләнә. Фән һәм искусствоны артабан үстереүгә байтаҡ средство бирелә.

1951 йылда культура-ағартыу учреждениеларенең селтәре киңәйтелә. Ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа яңы библиотекалар, ауыл клубтары, кинотеатрҙар һәм башҡа культура-ағартыу учреждениелары асыла. Культура-ағартыу учреждениеларен тотоуға, былтырғыға ҡарағанда, 64,1 миллион

(Дауамы 3-сө биттә).

1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджете ...аһында һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетенең үтәлеше тураһында

РСФСР финанс министре депутат И. И. ФАДЕЕВТЕҢ докладты

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

...акса билдәләнә һәм был ...һум тәшкил итәсәк. ...унын һаҡлау эшенә беҙҙең ...ыуса иғтибар бирелә. Халҡ... ...ярҙамы күрһәтеүҙе артабан ...маҡсаттарында ҡала һәм ауыл ...урындар һаны арта һәм ...фельдшерлек-акушерлек ...арттырыла. Халыҡ һаулығын ...тотоласаҡ ассигнованиелар ...һум суммала билдәләнде. ...әйтеп үтергә кәрәк, республ... ...РСФСР-ҙың Госу... ...бюджете буйынса билдәләнгән ...тыш, социаль-куль... ...союз бюджетенән йыл һайын бик күп аҡса тотола. Советтар Союзының 1951 йылға билдәләнгән бөтә Государство бюджете буйынса совет культураһын үстереүгә тотоласаҡ ассигнованиелар 120,8 миллиард һум тәшкил итә.

Донъяла бер генә ил дә был маҡсатҡа беҙҙең социалистик державабыҙ тотҡан кеүек бындай ҙур расходтар тотмай. Капиталистик илдәрҙең бюджеттарендә мәғариф һәм медицина ярҙамына тотола торған аҡсалар бик аҙ урын алалар.

- Совет государствоһының бюджете тыныс төҙөлөш, социалистик экономиканы артабан үстереү, халыҡтың көн-күрешен һәм культураһын тайпылышһыҙ яҡшыртыу бюджете булып тора.

Татар АССР-ы	953.130
Шул иҫәптән Ҡазан ҡалаһы	176.078
Башҡорт АССР-ы	966.669
Дағстан АССР-ы	400.672
Бурят-Монгол АССР-ы	246.937
Ҡабарҙы АССР-ы	161.564
Коми АССР-ы	236.962
Марий АССР-ы	237.622
Мордва АССР-ы	333.125
Төньяҡ Осетин АССР-ы	205.328
Удмурт АССР-ы	429.715
Сыуаш АССР-ы	342.765
Яҡут АССР-ы	427.049

Урындағы хужалыҡтан доходтарҙың үҫеүе 1951 йылға автономиялы республикалар бюджеттарының һәм урындағы бюджеттарҙың мөһим үҙенсәлеге булып тора. Бөгөнгөнән һуңғы биш йыллыҡ йылдарында урындағы хужалыҡ үҫте, хужалыҡ һәм культура төҙөлешендә яңы уңыштарға өлгәшелде.

Ләкин ҡайһы бер крайҙарҙа һәм өлкәләрҙә халыҡ хужалығы планын һәм бюджетте үтәүҙә серьёз етешһеҙлектәр бар әле. Атап әйткәндә, Краснодар крайында ошондай етешһеҙлектәр урын тота.

Урындағы Советтарҙың башҡарма комитеттәре һәм финанс органдары доходтар планының үтәлеүенә иғтибарҙы көсәйтергә тейештәр. Ауыл Советтәре халыҡ араһында киң рәүештә массовый-аңлатыу эштәре алып барыу юлы менән ауыл ерҙәрендәге түләүҙәрҙе йыйнау буйынса ҙур ярҙам күрһәтергә тейештәр.

...арствоның идара итеү органдарын тотоуға расходтар

...арствоның идара итеү органдарын ...сокращениелар, СССР Министр... ...ҡарарына ярашлы рәүештә, ...-идара итеү аппаратын то... ...расходтарҙың 5 проценте... ...иҫәпкә алып билдә...

...финанс органдары республика... ...учреждениеларендә һәм предприятие... ...штат-смета дисциплинаһының ...тикшереүҙәр һәм был ...етешһеҙлектәрҙе астылар. ...Аҙыҡ промышленносе минис... ...штаттан тыш должностар ...Урындағы промышленность ми... ...хужалыҡ ихтыяждарына ...тотолоуға юл ҡуйылған. ...учреждениеларендә һәм ...штаттан тыш 843 ...булған, 369 кешегә арттырыл... ...түләнгән һәм сметалар буйынса ...мең һум артыҡ аҡса тотолған. ...органдарҙа рәйеселәргә сара күреләр... ...министерстволар, урындағы Советтарҙың башҡарма комитеттәре һәм уларға буйһонған учреждениелар штат һәм смета дисциплинаһын нығыу рәүештә еренә еткерергә бурыслылар.

Ҡайһы бер министерстволар, атап әйткәндә, РСФСР-ҙың Урындағы ярыулыҡ промышленносе министерствоһы, Ит һәм һөтсөлөк промышленносе министерствоһы һәм РСФСР-ҙың Һаулыҡ һаҡлау министерствоһы үҙҙәренә буйһонған предприятиеларҙа һәм учреждениеларға етерлек тикләү контроль яһамайҙар. Был министерстволарҙың етәкселәренән үҙ ҡарамаҡтарындағы бөтә учреждениеларҙа, предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа йыл һайын ревизия үткәреү тураһында Хөкүмәт ҡарарының аныҡ үтәлеүен талап итергә кәрәк.

Министерстволар, ведомстволар, урындағы Советтарҙың башҡарма комитеттәре, аппаратты ябайлаштырыу һәм административ-хужалыҡ расходтарын, бигерәк тә тәьминат, сбытовой һәм әҙерләү ойошмаларының расходтарын кәметеү буйынса эште киңерәк йәйелдерергә тейештәр.

Шуны ла әйтеп үтмәйенсә ярамай, ҡайһы бер автономиялы республикаларҙа һәм өлкәләрҙә, атап әйткәндә, Марий һәм Мордва АССР-ҙарында, Брянск һәм Кемерово өлкәләрендә бюджет һәм халыҡ хужалығы планы менән күҙҙә тотолған социаль-культура учреждениелары селтәрен йәйелдереүгә урындағы органдар тарафынан тейешле саралар күрелмәне. Автономиялы республикаларҙың Министрҙар Советтәре һәм урындағы Советтарҙың башҡарма комитеттәре социаль-культура саралары буйынса 1951 йылға билдәләнгән пландың үтәлеүен тәьмин итергә тейештәр.

* * *

Депутат иптәштәр! РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджете Россия Федерацияһы халыҡтарының тыныс ижади хеҙмәтенең бик ҙур программаһын кәүҙәләндерә. Ул халыҡ хужалығының һәм культураның артабан күтәрелеүен тәьмин итергә һәм хеҙмәтсәндәрҙең көн-күрешен тағы ла яҡшыртырға саҡырылған.

Государство бюджете доходтарының тулыһынса һәм арттырып үтәлеүен һәм бюджет менән күҙҙә тотолған бөтә сараларҙың финанс менән өҙөклөһөҙ тәьмин ителеүен һәм экономия режимен бик нығыҡ еренә еткереүҙе тәьмин итергә кәрәк.

Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре халыҡ хужалығы планын уңышлы рәүештә тулыһынса үтәү өсөн, коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрен тормошҡа ашырыу өсөн ҙур энергия менән көрәшәләр. Миллиондарса совет кешеләре продукция етештереүҙе арттырыу һәм уның сифатын яҡшыртыу өсөн, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн ярышалар. Эшселәрҙең, колхозсыларҙың, совет интеллигенцияһының ижади инициативаһы халыҡ хужалығында экономия ябау һәм һаҡлап тотоноу өсөн, социалистик накопление өсөн көрәштә әлеһән-әле яңы башланғыстар тыуҙыра.

Шик юҡ, Россия Федерацияһы халыҡтары халыҡ хужалығы планын һәм Государство бюджетен уңышлы үтәү өсөн кәрәкле булған бөтә эште лә эшләрҙәр һәм иптәш Сталин етәкселегендә бөйөк коммунизм төҙөү эшендә яңы уңыштарға өлгәшерҙәр! (*Оҙаҡ дауам иткән көслө ҡул сабыуҙар. Бөтәһе лә урындарынан торалар*).

...йылда автономиялы республикаларҙың бюджеттәре һәм урындағы бюджеттәр

...-ҙың Государство бюджете рес... ...(РСФСР) бюджетенән, автоно... ...республикаларҙың бюджеттәренән ...урындағы бюджеттәрҙән тора.

...йылға автономиялы республи... ...бюджеттәренең һәм урындағы бюд... ...дөйөм күләме 41.306 миллион ...күҙҙә тотола, шул иҫәптән ...хужалыҡты финансировать ...085 миллион һум һәм социаль-... ...сараларына 31.314 миллион ...тотола.

...крайҙар, өлкәләр, республика ...буйынсағы ҡалалар һәм автоно... ...республикаларҙың бюджеттәре ту... ...сумаларҙа расләүға ҡуйыла (мең ...):

...й крайы	743.601
...р крайы	980.189
... ҡалаһы	39.474
...р крайы	782.212
... крайы	400.697
...ь крайы	548.966
... крайы	721.067
... өлкәһе	269.665
... өлкәһе	467.405
... өлкәһе	273.289
... өлкәһе	456.647
... луки өлкәһе	276.982
...р өлкәһе	443.336
... өлкәһе	519.583
... өлкәһе	862.527
... ҡалаһы	311.917
... өлкәһе	756.710
... өлкәһе	240.177
... өлкәһе	524.197
... өлкәһе	516.232
...нград өлкәһе	267.295
... өлкәһе	624.397
... өлкәһе	357.250
... өлкәһе	670.897
... өлкәһе	708.465
... өлкәһе	359.736
Ҡрым өлкәһе	365.902
Севастополь ҡалаһы	94.815
Куйбышев ҡалаһы	236.771
Куйбышев өлкәһе	422.326
Курган өлкәһе	346.055
Курск өлкәһе	719.309
Ленинград ҡалаһы	1.846.236
Ленинград өлкәһе	515.523
Молотов ҡалаһы	179.332
Молотов өлкәһе	726.968
Мәскәү ҡалаһы	3.538.719
Мәскәү өлкәһе	1.766.730
Мурманск өлкәһе	232.988
Новгород өлкәһе	312.944
Новосибирск ҡалаһы	208.041
Новосибирск өлкәһе	447.633
Омск ҡалаһы	133.609
Омск өлкәһе	388.101
Орел өлкәһе	444.028
Пенза өлкәһе	461.727
Псков өлкәһе	269.172
Донһағы Ростов ҡалаһы	198.006
Ростов өлкәһе	747.496
Рязань өлкәһе	585.846
Саратов ҡалаһы	188.559
Саратов өлкәһе	587.440
Сахалин өлкәһе	404.468
Свердловск ҡалаһы	271.042
Свердловск өлкәһе	977.817
Смоленск өлкәһе	490.366
Сталинград ҡалаһы	180.424
Сталинград өлкәһе	476.150
Тамбов өлкәһе	496.523
Томск өлкәһе	292.032
Тува автономиялы өлкәһе	121.832
Тула өлкәһе	477.869
Төмән өлкәһе	471.374
Ульяновск өлкәһе	358.298
Челябе ҡалаһы	174.651
Челябе өлкәһе	627.185
Чита өлкәһе	366.850
Чкалов өлкәһе	573.139
Ярославль өлкәһе	517.735

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Грамматик терминдәрҙе берләштереү тураһында

...башҡорт телен ғилми яҡтан өйрәнеү, ...эше Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына башланды һәм ...тапҡыр башҡорт теленең грамматика китаптары ла революциянан һуң ...баҫылып сыға башланылар.

...ылдарҙа баҫылып сыҡҡан баш... ...грамматика китаптарында тер... ...һәр бер автор үҙе теләгәнсә йө... ...Ҡайһы бер авторҙар, туранан-... ...теле грамматика китаптарына ..., терминдәрҙе лә ғәрәпсә өйрәт... ...Ҡайһы берҙәре башҡорт халҡы ...аңлайышһыҙ булған архаик термин... ...сығара торғайнылар.

...китаптар, беренсенән, ғәрәп теле ...грамматика китаптарына эйәреү юлы ме... ...терминдәрҙе ..., икенсенән, башҡорт ...һүҙҙәрҙең семантик әһәмиәттәре ...ғаилемэ алыймаҡаналыҡтан, башҡорт ...үҙенсәлектәрен бирә алманылар, ...формаль, системаһыҙ төҙөлгән китаптар.

...932 йылда ВКП(б) Үҙәк Комитете ...дәреслектәр сығарыу тураһында ...ҡарар менән ошо башбаштаҡлыҡ... ...сик ҡуйҙы. Был эшкә әҙәби тел конференцияларының, төрлө ғилми кәңәшмәләрҙең күп кенә файҙаһы тейҙе.

Стабилле дәреслектәрҙең иң һуңғы баҫмаларында ла ҡайһы бер авторҙарҙың грамматик терминдәрҙе үҙҙәре теләгәнсә атап йөрөтеү факттары әле булһа бөткәне юҡ. Мәҫәлән, Фәритов һәм Ғүмәров иптәштәрҙең педагогия училищелары өсөн яҙылған башҡорт теле дәреслегендә былай тиелә: 1) **дурт бөголош** (141-се бит). 2) **исемдәрҙең зат менән үҙгәреше** (151-се бит). 3) **исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше һәм уларҙың һорауҙары: кемгә? нимәнең? кемгә? нимәне?** (144-се бит). **һорау, билдәһеҙлек, кесәйтеүсе... ялғауҙары уртаҡ ялғауҙар** тип йөрөтәләр (123-сө бит) һәм башҡалар.

Сағыштырыу өсөн доцент Мансуров иптәштең ете йыллыҡ һәм урта мәктәптең 5 — 6 кластары өсөн дәреслеген алып ҡарайыҡ. Унда түбәндәгесә: 1) **исемдәрҙең һан менән үҙгәреше (берлек һәм күплек исемдәр).** (58-се бит). 2) **исемдәрҙең эйәлек менән үҙгәреше** (61-се бит). 3) **исемдәрҙең килештәр менән үҙгәреше һәм уларҙың һорауҙары: ни нәмә? ни нәмәнең? ни нәмәгә? ни нәмәне...** (165-се бит). 4) **һорау билдәһеҙлек кесәйтеүсе... ялғауҙары киҫәксәләргә инәләр** тиелә (222-се бит) һәм башҡалар. Тағы ла бик күп миҫалдар килтерергә мөмкин. Ошондай уҡ етешһеҙлектәр башланғыс кластар өсөн яҙылған грамматика китаптарында ла бар. Был хәл уҡытыусыларҙы һәм уҡыусыларҙы бик аптырашта ҡалдыра һәм әсә теленә дөрөҫ уҡытыу, уны үҙләштереү эшенә ҙур ҡыйынлыҡтар килтерә. Стабилле дәреслектәрҙә бер үк терминдәрҙең берләшмәүенең сәбәбе нәмәлә һуң? Улар, бөтәһенән дә элек, был эшкә авторҙарҙың совет мәктәптәрен юғары сифатлы дәреслектәр менән тәьмин итеү мәсьәләһенә яуапһыҙ ҡарауҙары арҡаһында килеп тыуған етешһеҙлектәр. Икенсенән, стабилле дәреслектәрҙе ҡарап баҫтырыу өсөн Башҡортостан Мәғариф министерствоһы эргәһендә төҙөлгән ғилми комиссияның һәм Башгосиздат работниктәренең был мәсьәләгә серьёз иғтибар итмәүҙәренән килеп сыҡҡан хаталар тип иҫәпләргә кәрәк. Киләсәктә был етешһеҙлектәр ҡабатланмаҫҡа тейеш.

Стабилле дәреслектәрҙәге терминдәрҙе берләштереү сараларын күрергә һәм уңдағы буталсыҡтарҙы бөтөрөргә кәрәк инде.

F. Китабов.

Ауыл Советы председателе трибунаһы

Культура-ағартыу эшен артабан яҡшыртыу өсөн

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтәренә булып үткән һайлауҙар ваҡытында Дүртөйлө районының Миңешке ауыл Советы һайлаусылары үҙҙәренең депутаттарына күп кенә наказдар бирҙеләр. Улар бигерәк тә ауыл Советы күләмендәге культура-ағартыу учреждениеларының эшмәкәрлеген артабан яҡшыртыу мәсьәләһен ҡуйғайнылар.

Шуны әйтергә кәрәк, беҙҙең ауыл Советында культура-ағартыу эштәре, райондың башҡа ауыл Советтәренә ҡарағанда, байтаҡ яҡшы тора. Беҙҙә бер ете йыллыҡ, өс башланғыс мәктәп, өс колхоз клубы, библиотека бар. Колхоз клубтары эргәһендә ҡыҙыл мөйөштәр эшләй. Ике урында медицина пункты бар. Миңешке ауылының үҙендә 600 кеше һыйышлы ҙур клуб бинаһына уҡыу залы, библиотека һәм агрокабинет урынлашҡан. Клуб матур итеп йыһазландырылған. Уның тирә яғы емеш-еләк ағастары менән ҡапланған. Ауылдың үҙ электр станцияһы һәм радиоузелы бар. Колхозсыларҙың йорттарында электр лампочкалары яна һәм радио һөйләп тора. Колхозсылар үҙәк, өлкә һәм район газеталары, журналдар алдыралар. Күп кенә газета һәм журналдар колхоз правлениеһына, бригадаларға, фермаларға, учреждениеларға алдырыла. Стена газеталары сығарыла.

Һайлаусыларҙың биргән наказдарын тормошҡа ашырыуҙа ауыл Советы үҙ депутаттарына, активҡа таянып эш итә. Һәр бер депутатҡа уның һәләтлегенә ҡарап конкрет эш участкаһы бирелгән һәм шул эштең үтәлеше ауыл Советының сессияһында, исполком ултырыштарында тикшерелеп барыла.

Культура-ағартыу учреждениеларының эшмәкәрлеген артабан яҡшыртыуға килгәндә, бында беҙгә Советтең даими комиссиялары, актив ҙур булышлыҡ күрһәтә. Мин тик ошо комиссияның эшенә генә туҡталам.

Ауыл Советының культура-ағартыу эштәре буйынса даими комиссияһы менән ете йыллыҡ мәктәптең директоры, депутат Әсмә Ғүмәрова иптәш етәкселек итә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә был комиссия үҙ тирәһенә совет, партия һәм комсомол активынан 25 кеше туплаған. Комиссия эш планын ошо активтар ҡатнашлығында төҙөп, практик сараларҙы тормошҡа ашыра. Мәҫәлән, эреләтелгән «Урал» колхозының малсылыҡ фермаһы работниктәре араһында культура-ағартыу эштәренең торошо тикшерелде. Һөҙөмтәлә ферма работниктәренә газета-журналдарҙың килтерелмәүе, газеталар бик һирәк уҡылыуы һәм шахмат-шашка кеүек уйындар ойошторолмауы билдәләнгәйне. Даими комиссия эште юлға һалыу өсөн депутат Хәйәт Ғилманова иптәште беркетте. Ул ферма работниктәрен газеталарҙы еткереүҙе тәьмин итеү менән бергә, улар араһында регуляр рәүештә ҡысҡырып газеталар уҡыу, беседалар алып барыу эшен ойошторҙо. Малсылыҡ фермаһына шулай уҡ депутат Бәлхиә Бакирова, уҡытыусы Зәһрә Дәүләтова иптәштәр беркетелде.

Ауыл Советының һуңғы көндәрҙә булып үткән өсөнсө сессияһы Миңешке ете йыллыҡ һәм Татар-Ярмия башланғыс мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эштәренең торошо тураһында тикшерҙе. Был мәсьәлә даими комиссияның тәҡдиме буйынса ҡаралды. Сессия мәктәптәрҙә тел тураһындағы фәнде уҡытыуҙың иптәш Сталин әйткән нигеҙҙә үҙгәртеп ҡоролмағанлығын билдәләне. Биология фәнен уҡытыу эше ауыл хужалығына бәйләп алып барылмағанлығы күрһәтелде. Етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн конкрет ҡарар ҡабул ителде.

Даими комиссияның инициативаһы менән клуб һәм уҡыу өйөнөң эше йәнләндерелеп ебәрелде. Художестволы үҙ эшмәкәрлек, драм-хор түңәрәктәренең эше һиҙелерлек яҡшырҙы. Түңәрәк члендәре библиотека мөдире иптәш Зарипова етәкселегендә йыш ҡына концерт номерҙәре менән сығыш яһай башланылар.

Яҙғы баҫыу эштәренең башланыуы айҡанлы культура-ағартыу учреждениеларының эштәре баҫыу стандарына күсерелә. Культура көстәре үҙҙәренең иғтибарҙарын яҙғы сәсеү осоронда колхозсыларҙы уңышлы хеҙмәтләндереүгә йүнәлтәләр.

С. Дәүләтшин,

Дүртөйлө районы Миңешке ауыл Советы председателе.

Яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн

Йомағужа. (Телефон аша). Партияның тәүге ойошмаһы инициативаһы буйынса «Урал» колхозының члендәре яҙғы сәсеүҙе бөтә агротехник ҡағиҙәләр нигеҙендә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үткәрергә йөкләмә алып, социалистик ярышты киң йәйелдерҙеләр.

Алынған йөкләмәләрҙе уңышлы үтәп сығыуҙы тәьмин итеү өсөн колхоздың коммунистәре иң яуаплы эш участкаларына беркетелделәр. Коммунист иптәш Мехов сәсеүселәр группаһына, иптәш Кузнецов ат ҡараусылар группаһына, иптәш Горшунов баҫыусылыҡ бригадаһына етәкселек итәләр.

Коммунистарҙан Хәлилов, Акулов, Ғәйнуллин һәм башҡа иптәштәр агитатор итеп билдәләнделәр. Улар агитационмассовый эште баҫыу стандарында алып баралар һәм стена газеталары, боевой листоктар сығарып торалар.

Трактор бригадаһының вагончигы яҡшы итеп йыһазландырылды, газета һәм журналдар менән тәьмин ителде, унда күсмә библиотека ойошторолдо.

Колхоздың үҙ эшмәкәрлек түңәрәге колхозсылар һәм тракторсылар алдында концерттар менән сығыш яһай.

Ә. Исәнаев.

Коммунистар эштең яуаплы участкаларында

Маҡар районы Киров исемендәге колхоз партия ойошмаһы яҙғы баҫыу эштәрен башлар алдынан коммунистарҙы һәм комсомолецтарҙы колхоздың бригадаларына һәм фермаларына беркетте. Беркетелгән иптәштәр, үҙ бригадаларында йыйылыш үткәреп, республика ауыл хужалығы алдынғылары кәңәшмәһенең ҡарарын тағы бер тапҡыр өйрәнгәндән һуң, бригадалар һәм айырым колхозсылар араһында социалистик ярыш ойошторҙолар. Бригадаларҙа агитация эше киң йәйелдерелде.

Емеш-еләк баҡсаһы звеноһына коммунист иптәш К. Камалов етәкселек итә. Уның баҡсаһынан быйыл колхоз 30 мең һумға яҡын доход алғайны. Быйыл иптәш Камалов тағы ла ҙурыраҡ доход бирергә һәм баҡсалағы виноградтан беренсе урожай алырға вәғәҙә итте.

Х. Мостафин.

Ауыл мәктәптәрендә педагогик практика

Күптән түгел Башҡорт государство педагогия институты тел һәм әҙәбиәт бүлегенең 3-сө курс студенттәре Ҡырмыҫҡалы районы Биш-уңғар урта мәктәбендә педагогик практика үттеләр. Быға тиклем педагогик практика тик ҡала мәктәптәрендә генә үткәрелә ине. Берәҙәм һәм ныҡышмалы эш һөҙөмтәһендә бөтә студенттар ҙа дәрестәрҙе уңышлы үткәрҙеләр.

Өлгәле дәрестәр үткәреү менән бер рәттән, мәктәптән тыш эштәргә, уҡыусылар менән индивидуаль эш алып барыуға ҙур иғтибар бирелде. Практиканттар етәкселегендә класс, дөйөм мәктәп стена газеталары, ҡулъяҙма әҙәби журнал сығарылды. Улар инициативаһы менән уҡыусылар һәм колхозсылар өсөн ауылда фәнни-политик темаларға беседалар үткәрелде.

Практиканттар мәктәптең тәжрибәле уҡытыусыларының дәрестәрен ҡарап, үҙҙәре өлгөрлекле дәрестәр биреп, теоретик белемдәрен практика менән нығыттылар.

Ф. Исәнголов,

Биш-уңғар урта мәктәбенең уҡыу-уҡытыу эштәре бүлеге мөдире.

Драматург С. Мифтахов ижадына арналған кисә

Ошо көндәрҙә Белорет педагогия училищеһе студенттәренең башҡорт драматургы Сәғит Мифтаховтың драматургия ижадына арналған кисәһе булды. «Сәғит Мифтаховтың ижады» тураһында училищеның III курс студенте, уҡыу отличнигы Фәрит Ғибадуллин доклад яһаны. Докладтан һуң студенттарҙың көсө менән С. Мифтаховтың «Һаҡмар» пьесаһы сәхнәгә ҡуйылды. Студенттар пьесаны ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡараныұлар.

Н. Ғүмәров.

Ата-әсәләр өсөн лекциялар

Ишембай ҡалаһы 3-сө номерлы башҡорт урта мәктәбенең уҡытыусылар коллективы уҡыусыларҙың ата-әсәләре менән тығыҙ бәйләнеш тота. Бында ата-әсәләр өсөн йыш ҡына лекциялар үткәрелә. Үткән аҙнала «Семьяла ата-әсәләрҙең авторитеты», «Экзамендарға әҙерлек» тигән темаларға лекциялар уҙғарылды, лекциянан һуң мәктәптең художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәге концерт бирҙе.

В. Даутов.

ТӨҘӨЛӨШ ӨСӨН МАТЕРИАЛДАР

Красноусол. Ғафури исемендәге эреләтелгән колхоз члендәре быйыл стандарт типта клуб, колхоз правлениеһы өсөн бина, общественный малдар өсөн торлаҡтар төҙөүҙе планлаштырҙылар. Был төҙөлөш эштәрен башҡарыу өсөн махсус бригада ойошторолдо. Хәҙер был бригада, 250 кубометр ағас әҙерләп, ташын ҡуйҙы, тәжәләп бригадаһы эшкә башланы.

А. Нәҙиров.

Әҙәбиәт һәм искусство работниктәренең йыйылышы

Иртәгә Өфө ҡала партия кабинетында әҙәбиәт һәм искусство работниктәренең йыйылышы була. Унда театр учреждениеларының һәм художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәренең репертуарының торошо һәм уны яҡшыртыу бурыстары тураһында мәсьәлә тикшереләсәк. Докладсы ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш С. Сәетбатталов.

Йыйылыш кис 7 сәғәттә башлана.

Малсылыҡ буйынса ғилми-производство конференцияһы

Балабойҙа булып үткән малсылыҡ буйынса ғилми-производство конференцияһында 5 райондың малсылыҡ работниктәре һәм специалистарынан бөтәһе 120 кеше ҡатнашты.

Конференцияла Әлшәй районы Салауат исемендәге колхоздың үҙе тәрбиәләгән 22 бейәнән 21 ҡолон алып үстереүсе тәжрибәле йылҡысыһы Ситдиков, «Победа» колхозының 120 һарыҡтан 173 бәрәс алып үстереүсе чабаны Матузов, «Авангард» колхозының 6 инә сусҡанан 68 сусҡа балаһы алып тәрбиәләп үстереүсе сусҡа ҡараусыһы Кубанская иптәштәр ҡатнашып, үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Конференцияла йәш малдарҙы тәрбиәләү, малдарҙың ҡыҫыр ҡалыуы менән көрәш һәм башҡа темаларға лекциялар уҡылды.

Бишбүләк районы ауыл хужалығы бүлегенең баш зоотехнигы Ғәлимов, Балабой совхозының ветеринар врачы Бурашов һәм башҡа күп кенә иптәштәр малсылыҡ өлкәһендә эштәр буйынса тәжрибәләр менән уртаҡлашыу тәртибендә докладтар менән сығыш яһанылар.

И. Николаенко.

Ауыл хужалығы күргәҙмәһенә кандидаттар

Ҡандра районы колхоздарында Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә ҡатнашыу хоҡуҡын алыу өсөн социалистик ярыш киң йәйелдерелде.

1940 йылда Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә ҡатнашып беренсе дәрәжәләге диплом алған, «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордены менән наградланған һәм автомашина менән бүләкләнгән «Ҡыҙыл маяҡ» колхозы быйыл да күргәҙмәгә ҡатнашыу өсөн кандидат итеп билдәләнде.

Был колхоз 1949 һәм 1950 йылдарҙа бойҙайҙан уртаса 17-шәр центнер, һолоноң гектарынан уртаса 19-ар центнер урожай алды. Колхоз общественный малсылыҡты үстереүҙә лә районда беренсе урынды алып тора.

Колхоздың Ленин орденлы председателе иптәш Яценко 1951 йылда игенселек һәм малсылыҡ өлкәһендә тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшеү өсөн көрәшә.

Күргәҙмәгә 1950 йылда 30 бейәнән 30 ҡолон алып үстереүсе һәм йылҡысылыҡты үстереү планын 127 процентҡа үтәүсе Калинин исемендәге колхоз да ҡатнашасаҡ.

F. Ғәзизуллина.

Колхоз председателдәре һәм партия ойошмалары секретарҙәре семинары

Ошо көндәрҙә ВКП(б)-ның Ҡырмыҫҡалы район комитеты яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта юғары сифатлы итеп үткәреүҙе тәьмин итеү маҡсатында колхоз председателдәренең һәм партияның тәүге ойошмалары секретарҙәренең ике көнлөк семинарын уҙғарҙы.

Семинарҙа ҡатнашыусылар: «Ауыл хужалығы артеле Уставын теүәл үтәүҙең әһәмиәте тураһында», «Колхоздарҙа уләнбаҫыулы сәсеү әйләнеше тураһында», «Эреләтелгән колхоздарҙа ер төҙөлөшө мәсьәләһе», «Общественный малдарҙы ҡышлатыуҙың тәүге йомғаҡтары», «Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре» тигән темаларға докладтар тыңланылар.

Быларҙан тыш, тәүге партия ойошмалары секретарҙәре өсөн «Яҙғы сәсеү кампанияһы осоронда политик-массовый эштәрҙе йәйелдереүҙең әһәмиәте тураһында» өҫтәмә доклад яһалды.

И. Бикмәтов.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

** **Архангель.** Муллаҡай ауылы эргәһендәге Аҫҡын йылғаһы аша яңы күпер һалынды. Күперҙе эшләүҙә «Красная Ревизия» пром артеле һәм Буденный исемендәге эреләтелгән колхоз члендәре ҡатнаштылар.

З. Низамов.

** **Петровск.** Маҡар районының һунарсылары 1951 йылдың беренсе кварталында үҙ йөкләмәләрен срогынан алда үтәп, «заготживсырье»ға 11 мең 500 һумлыҡ йәнлек тиреләре тапшырҙылар.

Алдынғы һунарсыларҙан Бикбаев, Мырҙабаев һәм Паромошин иптәштәр үҙ пландарын 300—340 процентҡа үтәнеләр.

С. Макарский.

„Ҡыҙыл Башҡортостан"

материалдары буйынса

„Политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу бүлексәһенең эше яҡшыртылһын!"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 29-сы номерында политик һәм фәнни белемдәр таратыу обществоһы Ғафури район бүлексәһенең хеҙмәтсәндәр араһында бер ниндәй ҙә эш алып бармауы, шулай уҡ ауылдарҙа обществоның лекторийҙарын ойоштороу саралары күрелмәүе тураһында хат баҫылып сыҡҡайны.

ВКП(б)-ның Ғафури район комитеты етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса практик саралар билдәләгән.

Йөкмәтелгән эшкә яуапһыҙ ҡарағаны өсөн общество бүлексәһенең председателе Әблиева эшенән бушатылған. Обществоның эшен юлға һалыу маҡсатында конкрет ойоштороу саралары билдәләнгән. Һуңғы көндәрҙә политик һәм фәнни белемдәр таратыу обществоһының район бүлексәһе план менән практик эшкә башлаған.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 11 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Бөгөн дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 28-се ултырышы булып үтте. АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Беренсе булып сығыш яһаған Джессеп, Совет делегацияһы, йәнәһе, көн тәртибе тураһында үҙенең тәҡдимдәрен индермәне, тип белдерҙе, көн тәртибе тәҙәйә «икеһен килеү һәм уның методтарын тураһында» өҫтәп иткән нөйнәрҙе тотто.

Джессептең сығышына яуап биреп, Громыко Джессептең, йәнәһе, Совет делегацияһы тотош көн тәртибе тураһында тәҡдим яһаманы, тигән һүҙҙәренең нигеҙһеҙ һәм хата булыуын күрһәтте.

— Тик, — тине Громыко, — көн тәртибе тураһында конкрет тәҡдимдәр индереп, уның фекеренсә көн тәртибенә индерелергә тейеш булған мәсьәләләргә ағап әйтте.

Совет делегацияһы шулай уҡ Италия менән арашыу договорының Триестка ҡағылған өлөшөнөң үтәлеше тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индерергә тәҡдим итте. Австрия договоры тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индереү хаҡында Совет делегацияһының позицияһы ла шулай уҡ өс держава вәкилдәре тарафынан кире ҡағыла.

— Беҙҙең фекеребеҙсә, — тине Громыко, — Европалағы көсөргәнешле хәл сәбәптәре тураһындағы һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ...

[illegible]

Американың хәрби базалары тураһында ла шулай уҡ әйтергә кәрәк, — тине унан һуң СССР вәкиле. — Был яҡлы билдәле, АҠШ күп кенә илдәрҙә хәрби-һауа һәм хәрби-диңгеҙ базалары төҙөй ...

Великобританияла Американың хәрби базалары булыуы тураһында Англия хөкүмәтенең официаль вәкилдәре ...

Америка хәрби базалары ... Великобританияла ...

[illegible]

— Һәм һеҙ ... — тине Громыко, — ...

ПАРИЖ, 12 апрель (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының бөгөн нәүбәттәге ултырышында Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

Великобритания вәкиле Дэвис беренсе булып сығыш яһаны. Атлантик пакт тураһында илдәрҙе Американың хәрби базалары тураһындағы ...

[illegible]

СССР вәкиле Громыко үҙенең сығышында ...

[illegible]

— Беҙ, — тип дауам итте Громыко, — ...

— Беҙ, — тине унан һуң Громыко, — ...

— Совет делегацияһы АҠШ, Англия һәм Франция вәкилдәренең былай белдереүҙәренә ҡарата ...

Был бәхәстә Громыко быларҙы әйтте ...

[illegible]

Сәмиғуллин

(Хикәйә)

Был ваҡиғаның тарихе шахтай зур түгел. Бер көн тулы йыл элек ... апрель баштары ...

[illegible]

Әнүәр Вәли.

Тыныслыҡтың Донъя Советы секретариаты белдереүе

ПРАГА, 12 апрель. ...

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһы белдереүе

ПХЕНЬЯН, 13 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы ...

[illegible]

Редактор Ғ. Ғ. [illegible]

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-18, партия тормошо һәм пропаганда бүлеге — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлеге — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлеге — 2-80-19, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлеге — 2-90-22.

П02438. Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тираж [illegible]

Етә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл
№ 75 (8792)
17
АПРЕЛЬ
шишәмбе

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫНЕҢ 1951 ЙЫЛДЫҢ 14 АПРЕЛДӘГЕ УЛТЫРЫШЫ ТУРАҺЫНДА ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ (1-се бит).

МАЙ АЛДЫ СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШЫ. Ю. Родионов. — Техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн көрәшәләр (1-се бит).

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ. Ғ. Ғәзизуллина. — Ағас ултыртыу планын арттырып үтәү өсөн (1-се бит).

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫНЕҢ БЕРЕНСЕ СЕССИЯҺЫ. 1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджеты һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетының үтәлеше тураһында РСФСР Верховный Советының бюджет комиссияһы председателе депутат С. П. Афанасьевтың ҡушма докладын (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Г. Вәлиев.—Коммунистарҙың идея кимәлен күтәреү тураһында даими хәстәрлек күрергә. (2-се бит).

П. Неумывако. — Партия кабинетының пропагандистарға ярҙамы (2-се бит).

Ә. Усманов. — Тел ғилеме тураһында иптәш Сталиндең хеҙмәттәре нигеҙендә башҡорт телен өйрәнеүҙә яҡындағы бурыстар (3-сө бит).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. Ф. Хафизов. — Беҙ сессияларҙы нисек үткәрәбеҙ (3-сө бит).

Й. Ғәлиев. — Сауҙа эшен баһаламайҙар (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КЕҢӘШТӘРЕ. А. Тайчинов. — Йәш ағас ултыртыу һәм тәрбиәләү (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР. (4-се бит).

СОВЕТ КАДРҘАРЫН ТӘРБИӘЛӘҮГӘ НЫҠЛЫ ИҒТИБАР БИРӘЙЕК!

Коммунистик төҙөлөштөң ҡатмарлы бурыстары етәксе совет работниктарға айырыуса юғары талаптар ҡуя. Совет работниктарына партия ойошмалары етәкселегендә ҡаланың, ауылдың экономикаһын һәм культураһын үҫтереү буйынса күп төрлө бурыстарҙы хәл итергә, киң ҡатлам хеҙмәтсән массаларҙы государство тарафынан билдәләнгән пландарҙы үтәргә һәм арттырып үтәүгә мобилизациялау, эшкә тура килә.

Етәксе совет работнигы, бигерәк тә хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала, район, ауыл һәм поселка Советтары исполкомдары председателдәре дөйөм государство интересына ҡағылған сығып урындағы бөтә эштәр менән етәкселек итәләр. Шуның өсөн урындағы Советтың исполком председателе үҙенең кругозорын үҙе етәкселек иткән ауыл рамкалары менән генә сикләргә тейеш түгел. Ул бөтә илдең бөтә дә күберәк белергә тейеш. Әммә бының өсөн тырышып уҡырға, үҙенең идея-политик, шулай уҡ, специаль белемен, агрономия һәм колхоз производствоһы буйынса белемдәрен дә күтәрергә кәрәк. «Государство һәм партия эшенең теләгән бер тармағында работниктарҙың политик кимәле һәм марксистик-ленинсе аңлылығы ни тиклем юғары булһа, эш тә шул тиклем юғары һәм уңышлы, эштең һөҙөмтәләре шул тиклем эффектлы була...» тип әйтә бөйөк Сталин.

Алдынғы совет работниктары был мөһим бурысты яҡшы аңлайҙар, әлбиттә. Баҡалы, Бүздәк, Саҡмағош, Туймазы, Дәүләкән райондарының етәксе совет работниктары үҙ белемдәрен күтәреү эшен даими ныҡ эшләп киләләр. Улар район партия мәктәптәрендә, түңәрәктәрҙә марксистик-ленинсе теорияны үҙләштереп, үҙҙәренең политик белемдәрен күтәрәләр. Бүздәк район Советы исполкомы председателенең урынбаҫарҙары иптәш Шәкиров Әхсәт — Башҡорт педагогия институтында, иптәш Ревякин ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы юғары партия мәктәбендә ситтән тороп уҡыйҙар.

Был район Советтарының исполкомдары етәксе совет работниктарын тәрбиәләү эшенә менән яҡындан тороп шөғөлләнәләр, уларҙың нисек уҡыуҙарын ныҡлы күҙәтәләр. Ауыл Советтарының председателдәре, секретарҙары һәм даими комиссияларҙың етәкселәре өсөн семинарҙар үткәрелеп, совет төҙөлөшө темаларына докладтар, лекциялар уҡыла, уңышлы ауыл Советтарының, даими комиссияларҙың эш тәжрибәләре уртаҡлашыла.

Черниковск, Өфө, Октябрьский, Стәрлетамаҡ ҡала Советтары ла «Совет работнигы кәңәше» үткәреү практикаһын индерҙеләр һәм был кеңәш совет эше тәжрибәһен уртаҡлашыуҙа район һәм ҡала Советтары депутаттарына, уларҙың бүлек мөдирҙәренә һәм башҡа совет работниктарына бик ҙур булышлыҡ итә. Был яҡшы башланғысты республикабыҙҙың ҡалған бөтә Советтарының да эш практикаһына индереү ҙур эффект бирер ине.

Әммә күп кенә райондарҙа Совет работниктарын тәрбиәләү эше сиктән тыш ҡуйылған. Совет работниктарының идея-политик кимәлен һәм эш квалификацияһын күтәреү тураһында хәстәрлек күрмәүҙе бигерәк тә Архангель, Оло Эйек, Борай, Салауат райондарында күрергә мөмкин.

— Ауыл Советы исполкомы, — тине Салауат районы Ҡаратауҙы ауыл Советы председателе иптәш Зәбиров, — юғары ойошмаларҙың ярҙамына һәм конкрет етәкселегенә мохтаж. Бер йыл ярым ваҡыт буйынса ауыл Советы председателдәре өсөн бер генә тапҡыр ҙа семинар үткәрелмәне. Эреләтелгән колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан ныҡытыуҙа ауыл Советы колхоз правлениеларына тейешле практик ярҙам күрһәтә алмай. Район Советы исполкомы ауыл Советы председателдәре өсөн ай һайын семинарҙар үткәрһен, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ҡыҫҡа сроклы курстар ойоштороһон ине.

Етәксе совет работниктарының белем һәм культура кимәлен күтәреүҙә уларға район Советы исполкомдары әшлекле ярҙам күрһәтергә бурыслы. Шулай ҙа был ярҙам күпселек урындарҙа тейешенсә күрһәтелмәй әле. Ауыл Советы председателдәренең үҙ белемдәрен күтәреү өҫтөндә нисек эшләүҙәре, ниндәй төр мәктәптә йәки түңәрәктә уҡыуы, белемдәрен нисек үҙләштереүҙәре тураһында Министрҙар Советының ойоштороу-инструкторҙар һәм кадрҙар бүлектәрендә бер төрлө лә мәғлүмәт юҡ. Етәксе совет работниктарының белемен күтәреү эше менән бер кем дә ҡыҙыҡһынмай. Шуның өсөн республикала бер генә ауыл Советы председателе лә урта йәки агрономия уҡыу йорттарында ситтән тороп уҡымай, үҙ белемдәрен күтәреү өҫтөндә тейешенсә эшләмәй.

Совет работниктарының белемен һәм культураһын күтәреүҙең иң таралған формаларынан береһе булған семинарҙар бик һирәк үткәрелә, күпселек ваҡыттарҙа улар гәзиттәге производство кәңәшмәләренә әйләнеп китәләр, тейешле эффект бирмәйҙәр.

Район Советы исполкомдары эргәһендә ауыл Советтарының председателдәре һәм секретарҙары өсөн даими семинарҙар бик аҙ районда ойошторолған. Кустовой кәңәшмәләр үткәреү практикаһы ҡулланылмай.

Совет работниктарына квалификациялы лекциялар, консультациялар үткәрелмәй, семинарҙар үткәреү өсөн тематик пландар систематик ебәрелмәй.

Район Советы исполкомдары работниктары урындарҙа булған ваҡиғаларҙа ауыл Советы председателдәренә, секретарҙарына, даими комиссия етәкселәренә инструктаж үткәреү, эш пландары төҙөүҙә, массовый саралар һәм сессия ултырыштарын үткәреүҙә етәрлек практик ярҙам күрһәтмәйҙәр, ә күберәк булып үткән фактарҙы регистрациялау менән шөғөлләнәләр, ревизорҙарға әүерелеп китәләр.

Күрше өлкәләрҙә совет работниктары өсөн район совет активы мәктәптәре эшләп килә. Был мәктәптәр совет работниктарының дөйөм мәғлүмәттәрен, политик кимәлдәрен күтәреүҙә, уларҙың ойоштороу тәжрибәләрен арттырыуҙа үҙҙәрен аҡлап киләләр. Беҙҙең республикабыҙҙа бындай мәктәптәрҙе булдырыу тураһында ни өсөндөр хәстәрлек күрелмәй. Ауыл һәм поселка Советтары председателдәре өсөн 6 айлыҡ курс ойоштороу тураһында Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының ойоштороу-инструкторлыҡ бүлеге бик күптән бирле һүҙ алып бара, ләкин курстың һаман ойошторолғаны юҡ әле. Алдынғы район, ҡала, ауыл Советтарының һәм уларҙың даими комиссияларының эш практикаһы тураһында брошюралар сығарылмай.

Беҙҙең илебеҙҙең культураһы бик ныҡ алға китте. Эшселәр, колхозсылар үҙҙәренең эштәрен совет фәненең һәм техникаһының яңы ҡаҙаныштары нигеҙендә алып баралар. Хеҙмәтсәндәр промышленность, баҫыусылыҡ, малсылыҡ һәм артель хужалығының башҡа тармаҡтарындағы яңылыҡтар, алдынғы тәжрибәләр менән ныҡ ҡыҙыҡһыналар, белемгә эйә булалар һәм был белемдәрҙе практик эштәрендә тыйыу ҡулланалар.

Хәҙер массалар менән етәкселек итеү өсөн юғары культуралы һәм белемле совет работниктары кәрәк. Улар үҙ белемдәрен күтәреү һәм камиллаштырыу өҫтөндә, үҙҙәренең эш квалификацияларын һәм культура кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә ныҡлап эшләргә тейештәр.

Совет работниктарына белем алыуҙа республиканың Министрҙар Советы работниктарының көндәлек һәм етди ярҙам итеүҙәре талап ителә. Урындағы партия ойошмалары совет работниктарының үҙ белемдәрен күтәреү өҫтөндә нисек эшләүҙәрен ныҡ күҙәтергә, уларҙың елле-бер-әле үҫә барған политик һәм культура талаптарына етди иғтибар бирергә, уларҙың үҫеше тураһында тейешле хәстәрлек күрергә бурыслылар.

РСФСР Верховный Советының 1951 йылдың 14 апрелдәге ултырышы тураһында

ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ

14 апрелдә, киске 6 сәғәттә, Кремлдә, ҙур Кремль Дворецында РСФСР Верховный Советының икенсе ултырышы булды.

РСФСР Верховный Советы председателе депутат **Л. Н. Соловьев** председателлек итте.

РСФСР Верховный Советы РСФСР Верховный Советы депутаттарының полномочиеларын тикшереү тураһында Верховный Советтың Мандат комиссияһы председателе депутат **И. Т. Гришиндың** докладын тыңланы.

Иптәш Гришин бөтә һайлау округтары буйынса РСФСР Верховный Советы депутаттарының полномочиеларын тикшереү һөҙөмтәләре тураһында Мандат комиссияһының ҡарарын иғлан итте:

«Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Верховный Советына һайлауҙар буйынса һәр бер депутат тураһында Үҙәк һайлау комиссияһы тарафынан тапшырылған бөтә һайлау документтарын һәм материалдарын тикшереп, Верховный Советтың Мандат комиссияһы шуларҙы билдәләй:

1. Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Верховный Советына депутаттар һайлау бөтә округтар буйынса Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Конституцияһы һәм Верховный Советына һайлауҙар тураһындағы Положение нигеҙендә һәм уларға тулыһынса ярашлы итеп үткәрелгәндәр.

2. Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Верховный Советына депутаттар һайлауға ҡарата ниндәй ҙә булһа һайлау округы буйынса һайлауҙарҙы юҡҡа сығарыу өсөн бер ниндәй ҙә нигеҙләмәләр юҡ, шулай уҡ Конституцияны һәм һайлауҙар тураһындағы Положениены боҙоу хаҡында һайлау округтары буйынса ла, шулай уҡ Үҙәк һайлау комиссияһына ла жалобалар һәм ғаризалар юҡ.

Әйтелгәндәр нигеҙендә Верховный Советтың Мандат комиссияһы Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Верховный Советының Үҙәк һайлау комиссияһы тарафынан регистрацияланған бөтә депутаттарының полномочиеларын дөрөҫ тип таный, был депутаттарҙың исемлеге «Известия» гәзитәһының 1951 йыл 22 февралдә сыҡҡан 43-сө номерында иғлан ителгән».

Верховный Совет депутат **В. Н. Лебков** тәҡдиме буйынса Мандат комиссияһының доклады хаҡында түбәндәге ҡарарҙы ҡабул итте:

«Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Верховный Советы ҡарар итә:

1. Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Верховный Советының Мандат комиссияһы докладын раҫларға.

2. Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының Верховный Советына һайлауҙар буйынса Үҙәк һайлау комиссияһы тарафынан регистрацияланған, Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Верховный Советының бөтә һайлау округтары буйынса һайланған депутаттарының полномочиеларын дөрөҫ тип танырға.

3. Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Верховный Советына һайлауҙар буйынса Үҙәк һайлау комиссияһының эшен тамамланған тип иҫәпләргә».

Бынан һуң Верховный Совет РСФСР Верховный Советының Бюджет комиссияһы председателе депутат **С. П. Афанасьевтың** ҡушма докладын тыңланы.

Бюджет комиссияһының ҡушма докладынан һуң 1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджеты тураһында һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетының үтәлеше тураһындағы доклад буйынса фекер алышыу башланды. Фекер алышыуҙа: депутат **П. Ф. Ладанов** (Ленинград ҡалаһының Мәскәү округы), депутат **Ф. З. Зарафуранов** (Башҡорт АССР-ы, Ҡыйғы округы), депутат **Н. И. Бобровников** (Мәскәү ҡалаһының Арбат округы), депутат **Д. К. Филимонов** (Томск ауыл округы), депутат **М. И. Макаров** (Красноярск крайы, Боготольск округы) сығып һөйләнеләр.

РСФСР Верховный Советының икенсе ултырышы ошоноң менән ябылды.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы исполкомында һәм ВКП(б) ҡала комитетында

Промышленность предприятиеларының валовой продукция етештереүҙә 1951 йылдың март айы планын үтәү буйынса ҡала райондарының социалистик ярышында беренсе урынды алған районға ҡала Советы исполкомы һәм ВКП(б) ҡала комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын биреү тураһында

1951 йылдың март айында промышленность предприятиеларының эш йомғаҡтарын ҡарап, ҡала Советы исполкомы һәм ВКП(б) ҡала комитеты бюроһы, ҡала промышленносы март айы планын 103,8 процентҡа үтәне һәм февраль айына сағыштырғанда, валовой продукцияны фактик алғанда 15,5 процентҡа артығыраҡ етештерҙе, тип билдәләй.

Ҡала Советы исполкомы һәм ВКП(б) ҡала комитеты бюроһы промышленность предприятиеларының планды үтәү буйынса ҡала райондарының социалистик ярышында промышленность предприятиелары валовой продукция етештереү буйынса март айы планын 108,4 процентҡа үтәгән Ленин районын (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Вәлиев, район Советы исполкомы председателе иптәш Сәғитов) еңеүсе тип тапты һәм уға ҡала Советы исполкомының һәм ВКП(б) ҡала комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын тапшырырға, тип ҡарар итте.

Молотов районының промышленность предприятиелары март айы планын 105,7 процентҡа, Киров районы 100,2 процентҡа һәм Жданов районы 100,1 процентҡа үтәне.

Баҫыу эштәре көндәлеге

АҒАС УЛТЫРТЫУ ПЛАНЫН АРТТЫРЫП ҮТӘҮ ӨСӨН

Ҡандра. Район колхоздары былтыр ағас ултыртыу планын арттырып үтәгәйнеләр. Ултыртылған ағастар бик матур булып үҫеп киләләр.

Быйыл район колхоздары Туймазы районы колхозсылары менән социалистик ярыш договоры төҙөнөләр. Был договор буйынса улар яңынан 360 гектар ағас ултыртырға, үҙған йыл ултыртылған 350 гектар ағасты тейешенсә тәрбиәләргә, 30 гектар майҙанда колхоз урманы үҫтерергә йөкләмә алдылар.

Колхоздарҙа был йөкләмәне үтәү өсөн иртә яҙҙан уҡ әҙерлек эштәре башланды. «Ҡыҙыл Октябрь», «Өс ҡайын», Молотов, Калинин исемендәге колхоздар урман полосаларында ҡар һыуҙары тотоу эшен ойоштороҙолар. Хәҙер был колхоздар 150 мең тип тополь ағастары ҡайтартып, ултыртыуға башланылар.

Күп колхоздарҙа үҙған көҙ йыйылған ағас орлоҡтарының сығышы тикшерелә. Райсовхоз да ағас орлоҡтары һатыу эшен ойошторҙо. Ҡандралағы государство питомнигы һәр төрлө ағас үҫентеләре менән колхоздарҙы тәьмин итә.

Ғ. Ғәзизуллина.

* * *

Туймазы. (Телефон аша). Мичурин исемендәге ауыл хужалығы артеле члендары районда беренсе булып баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултырта башланылар. Бер нисә көн эсендә генә бында 10 гектар майҙанда ағас ултыртылды.

Колхоз быйыл бөтәһе 13 гектар баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртырға тейеш. Колхозсылар ағас һәм баҡса ултыртыу уң көнлөгөнә ҡушылдылар һәм ағас ултыртыуҙың йыллыҡ планын ошо көндәрҙә тулыһынса үтәп сығыуға йөкләмә алып, социалистик ярышҡа сыҡтылар.

Молотов һәм Туҡаев исемендәге колхоздарҙа ла ағас ултырта башланылар. Молотов исемендәге колхозда ултыртыу өсөн 50 мең тип үҫенте әҙерләнде һәм 30 мең тип үҫенте питомниктан алынды.

* * *

Благовар. (Телефон аша). «Ҡарғалы баш» ауыл хужалығы артеленең члендары Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының ағас һәм баҡса ултыртыу буйынса уң көнлөк үткәреү тураһындағы ҡарарын ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланылар. Иптәш Нәғимов етәкселек иткән ағас ултыртыу звеноһының члендары бер-ике көн эсендә генә 2 гектар майҙанда ағас ултырттылар.

Яңы еңеүҙәр өсөн

Беҙҙең Красноусол быяла заводы коллективы 1951 йылдың тәүге көндәренән үк, социалистик ярышты киң йәйелдереп, ҙур уңыштарға өлгәште.

Хәҙер заводтың бөтә эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре май алды социалистик ярышы менән солғанып алынды. Фиҙакәр хеҙмәт итеү һәм агит-массовый эште тейешле юғарылыҡҡа ҡуйыу һөҙөмтәһендә коллективтың 96 проценты яңын эшсеһе үҙ нормаларын арттырып үтәйҙәр. Уларҙың 68 проценты норманы бер ярым һәм унан да артыҡҡа еткерәләр.

Техниканы тулы ҡеүәтендә эшләтеү нигеҙендә, быяла ҡайнатыу мейестәренең дөйөм майҙанының бер квадрат метрынан тәүлегенә төҙәк быяла алыу квартал эсендә 57 килограмға артты.

Завод коллективы, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең халыҡ-ара солидарлыҡ көнө— 1 Майҙы хеҙмәт фронтында яңы еңеүҙәр менән ҡаршылау өсөн ярышҡа ҡушылып, дүрт айлыҡ программаны бөтә күрһәткестәр буйынса 21 апрелгә үтәргә социалистик йөкләмә алды. Май байрамы көнөнә пландан тыш 130 мең квадрат метр юғары сифатлы быяла бирергә тейешбеҙ.

Беҙ хәҙер заводта булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өҫтөндә эшләйбеҙ. Бының өсөн беҙгә инженер Ковалев методын ҡулланыу һәм яңы техниканы үҙләштереү ярҙам итә. Коллектив һәр бер айлыҡ һәм йыллыҡ программаны бөтә күрһәткестәр буйынса уңышлы үтәүенә һис шикһеҙ ышана.

А. Валиц,
завод директоры,

А. Чушкин,
партия комитеты секретары,

Н. Дубинистов,
завод комитеты председателе.

Техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн көрәшәләр

Магнитогорск домнасыларының патриотик башланғысы Белорет металлургтары араһында ҡайнар хуплау тапты.

Металлургия заводының домнасылары мейестәрҙең файҙалы ҡулөмө коэффициентын, үткән йылға ҡарағанда, арттырыу өсөн көрәшәләр. Быны домна цехының иптәш Абдрахманов етәкселек иткән алдынғы сменаһы ғына ла асыҡ күрһәтә. Был смена айлыҡ производство планын систематик арттырып үтәй. Уның сменаһында эшләүсе горновой иптәш Мухин домна мейесенең файҙалы коэффициентын план буйынса ҡаралғандан байтаҡ арттыра. Мухин менән горновой Розыгин иптәштәр ярышып эшләйҙәр. Был ике алдынғы горновойҙың гүзәл хеҙмәт күрһәткестәре күптәр өсөн өлгө булып тора. Домнасылар мейестәрҙең тулы ҡеүәтен файҙаланыуҙы яҡшыртыу юнәлешендә яңынан-яңы резервтарҙы хәрәкәткә килтерәләр.

Үткән йылда алдынғы сталевар, Советтар Союзының почетлы металлургы иптәш Зимин мейестең бер квадрат метр төбәнән 6,11 тонна ҡорос иретеп алыуға өлгәшкәйне. Ә быйыл сталевар Иноземцев бер квадрат метрҙан ҡорос иретеп алыуҙы 6,5 тоннаға, сталевар Симонов 6,9 тоннаға еткереү өсөн йөкләмә алдылар. Сталевар Сигизбаев, уның менән ярышып эшләүсе Емельянов һәм башҡа иптәштәр ошо кимәлдә яулап алыу алдында торалар.

Техниканы тулы файҙаланыу өсөн көрәш металлургтар өлгөһендә ҡала предприятиеларында киңдән-киң киңерәк йәйелә бара. Ҡорос-сымыҡ заводында эшләүсе алдынғы стахановсылар ҡайһы бер машиналарҙа ҡорос һүҙыу тиҙлеген камиллаштырыу һөҙөмтәһендә гүзәл хеҙмәт өлгөләре бирҙеләр. Улар бығаса тиклем прогрессив норма тип һаналған бер минутҡа 179 метр ҡорос-сымыҡ һүҙыу урынына хәҙер 230 метр бирен эшләйҙәр.

Мәғәфуров, Михайлова, Егупова кеүек хеҙмәт алдынғылары был күрһәткестәрҙе байтаҡҡа үҙып та киттеләр.

Ю. Родионов,
ВКП(б)-ның Белорет ҡала комитеты промышленность бүлеге мөдире.

Һүҙебеҙ эштән айырылмаҫ

Социалистик ярыш, стахановсы хәрәкәт беҙҙең завод коллективының традицияһына инде. Улар завод коллективы өсөн көндәлек бурыс булып торалар. Һәр бер эшсе, инженер-техник работник һәм хеҙмәткәр был таңғалда үҙенең төп бурысын яҡшы белә. Шуға күрә бөтә фиҙакәр хеҙмәтен производство программаһын срогынан алда үтәүгә йүнәлдерә.

Беҙҙең коллектив быйыл 1 Май байрамын хеҙмәттә юғары хеҙмәт күрһәткестәре менән ҡаршылау өсөн социалистик ярышҡа сыҡты һәм үҙенә йөкләмәләр алды. Ә һәр бер эшсе һәм инженер-техник работник араһында индивидуаль ярыш йәйелдерелде. Беҙ ҙә был ярыштан ситтә түгел. Производство программаһын срогынан алда үтәү һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү өсөн үҙ-ара ярыш алып барабыҙ. Был ярыш үҙ нәүбәтендә ҙур ғына уңышлыҡтарға өлгәшергә мөмкинлек бирә. Беҙҙең көндәлек норма үтәлеше 140 — 150 процент тәшкил итә.

Үҙ бәхетебеҙ һәм илебеҙҙең артабанғы экономик ныҡыуы өсөн тағы ла яҡшыраҡ эшләргә тейешбеҙ. Беҙ, канатчиктар, быны яҡшы аңлайбыҙ. Бөтә фиҙакәр хеҙмәтебеҙҙе май алды ярышында яңы уңыштарға өлгәшеүгә арнайбыҙ. Беҙҙең бурыс — көндәлек норманы 180 — 200 процентҡа үтәү. Уны һис шикһеҙ үтәйәсәкбеҙ.

Г. Закиров,
А. Сөтгәреев,
Б. Аетбаев,
Белорет ҡорос-сымыҡ заводы эшселәре.

Өфө „Главунивермаг“ промкомбинатында

Өфө «Главунивермаг» промкомбинаты коллективы Беренсе май байрамын производствола яңы еңеүҙәр менән ҡаршылай. Комбинатта 1 квартал планы срогынан алда 109,3 процентҡа, шул иҫәптән март айы планы 119,3 процентҡа үтәлде. Хеҙмәт етештереүсәнлеге 108 процентҡа күтәрелде, продукцияның үҙенә төшөү хаҡы байтаҡ кәмене. Коллективҡа Жданов район Советының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

Коллектив май алды социалистик ярышына ҡушылып, стахановсы вахтаға баҫты һәм дүрт айлыҡ производство программаһын срогынан алда үтәү өсөн күтәренке йөкләмәләр ҡабул итте. Бригадалар араһында ярыш айырыуса ҡыҙыу бара. Улар үҙ-ара ярыш договорҙары төҙөнөләр.

Токарева, Трифонова һәм Янбарисова иптәштәр етәкселек иткән бригадалар ярышта алда баралар. Улар көндәлек нормаларын 130—150 процентҡа үтәп, тик отлично сифатлы ғына продукция етештерәләр.

А. Харисов.

Ярышҡа сыҡтылар

Салауат районы Киров исемендәге колхозда сәсеү орлоҡтары таҙартылып тулы кондицияға еткерелеп һалынғайны. Хәҙер был орлоҡтарҙы яровизациялау башланды.

Шулай уҡ минераль ашламалар, көл һәм ҡош тиҙәге менән ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу эштәре лә ҡыҙыу темп менән бара.

Агроном иптәш Низаметдинов колхозсыларҙы юғары урожай өсөн көрәшкә туплай.

Колхозсылар сәсеүҙе 4-5 көндә һәм юғары агротехник кимәлдә үткәрергә һүҙ биреп, Крупская исемендәге ауыл хужалығы артеле члендарын социалистик ярышҡа саҡырҙылар.

Х. Мусин.

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ БЕРЕНСЕ СЕССИЯҺЫ

1951 йылға РСФСР-зың Государство бюджете һәм РСФСР-зың 1950 йылғы Государство бюджетенең үтәлеше тураһында

РСФСР Верховный Советенең бюджет комиссияһы председателе депутат С. П. АФАНАСЬЕВТЕҢ кушма докланы

Депутат иптәштәр! РСФСР Верховный Советенең бюджет комиссияһы Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының Министрзар Советы тарафынан һеззең раҫлауығызға индерелгән, РСФСР-зың 1951 йылға Государство бюджетен һәм 1950 йылғы бюджеттең үтәлеше тураһындағы отчетты ҡараны.

Үзған 1950 йылда совет кешеләре большевиктар партияһы етәкселегендә, иптәш Сталиндең тәрән аҡыллы юлбашсылығында халыҡ хужалығының һәм культураның бөтә тармаҡтарында яңы ғәйәт зур уңыштарға өлгәштеләр.

Республика һәм урындағы промышленностең валовой продукция етештереү пландары арттырып үтәлде. 1950 йыл социалистик игенселектең яңы күтәрелеше, общественный малсылыҡтың алға китеүе, колхоздарзы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыу менән билдәләнде.

Халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарындағы эштәрҙе механизациялау кимәле байтаҡ күтәрелде. Производствола хезмәттең юғары етештереүсәнлегенә, оборудованиеларҙе һәм механизмдарҙе яҡшы файзаланыуға, сырьены һәм материалдарзы тағы экономиялыраҡ тотоноуға өлгәшкән йөззәрсә һәм меңдәрсә гүзәл новаторзар үсеп сыҡты.

Республикабыз культура төзәлеше өлкәһендә лә зур уңыштарға өлгәште. Мәктәптәрзең, техникумдарзың юғары уҡыу йорттарының селтәре киңәйтелде, бик күп яңы культура-ағартыу учреждениелары барлыҡҡа килде.

Халҡыбыззың материаль тормош кимәлен артабан күтәреү 1950 йылдың төп йомғаҡтарының береһе булып тора. 1951 йылдың 1 мартынан башлап аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарзарына государствоның ваҡлап һатыу хаҡтарын иҫәп буйынса дүртенсе тапҡыр арзанайтыу, халыҡтың көн-күреше тураһында сталинса ыҡлаҡһыз хәстәрлектең яңы яҡты күззәлләнеше, үзенең алдына тыныслыҡ һәм халыҡ бәхете өсөн ижади эш политикаһын үткәреүзе маҡсат итеп ҡуйған Совет государствоһының ысын-ысынлап тыныслыҡ һәйәүен иҫбатлау булып тора.

Финанс министры депутат Фадеев тарафынан Верховный Советҡа һөйләп бирелгән 1950 йылдағы республика Государство бюджетенең үтәлеше йомғаҡтары 1950 йылда Государство бюджетенең халыҡ хужалығын алға ебәреүзә государство планында ҡаралған сараларзың үтәлеүен тәьмин иткәнлеген күрһәтәләр.

Бюджет комиссияһының отчет буйынса замечаниелары юҡ һәм Министрзар Советы тарафынан тәҡдим ителгән ошо отчетты: доходтар буйынса 53.698,3 миллион һум күләмендә, расходтар буйынса 53.200 миллион һум, доходтарзың расходтарға ҡарағанда 498,3 миллион һумға артып китеүе күләмендә булған отчетты үзгәртеүһез раҫларға тип тәҡдим индерә.

1951 йылға республикабыззың Государство бюджете ағымдағы йылда Россия Федерацияһының хужалыҡ һәм культура төзәлешенең бөйөк программаһын тулыһынса кәүҙәләндерә. Республика Государство бюджетенең доходтары 1951 йылда, 1950 йыл менән сағыштырғанда, 481 миллион һумға, ә 1951 йылға Государство бюджете расходтарының дөйөм күләме, 1950 йылда үтәлгәнгә ҡарағанда, 936 миллион һумға арта.

Бюджет доходтарының һәм расходтарының күп миллиардлы суммаларында халыҡ хужалығын артабан үстереү планы, беззең илебез халыҡтарының материаль көн-күреш һәм культура кимәлен күтәреү үзенең кәүзәләнешен таба.

Депутат иптәштәр! Бюджет комиссияһы бюджеттең доходтар һәм расходтар буйынса материалдарын һәм иҫәптәрен ҡарап сыҡҡандан һуң, РСФСР-зың 1951 йылға Государство бюджетен республика хөкүмәте тарафынан ҡабул ителгән суммаларза, бюджет комиссияһы тарафынан депутаттарға таратып бирелгән заключениеларзағы төзәтеүзәр менән раҫларға тип тәҡдим индерә.

Бюджет комиссияһы тарафынан тәҡдим ителгән айырыуса әһәмиәтле үзгәртеүзәргә генә туҡталам. Бюджет комиссияһы бюджет доходтарының дөйөм суммаһын 83 миллион һумға арттырырға, шул иҫәптән: хужалыҡ ойошмаларының табыштарынан отчислениелар буйынса 52,8 миллион һумға, промысловый кооперациялардан подоходный налогтар буйынса 14,77 миллион һумға, урындағы налогтар һәм доходтар буйынса 15,5 миллион һумға арттырырға тәҡдим итә, табыштарзан отчислениелар буйынса промышленностең түләүзәрен 38,5 миллион һумға, коммуналь хужалыҡтың түләүзәрен 9,7 миллион һумға һәм башҡа хужалыҡ ойошмаларының түләүзәрен 4,6 миллион һумға арттырырға тәҡдим ителә.

Бюджет комиссияһы промышленность министерстволарының күп кенә предприятиеларында ассортиментты яҡшыртыу, эшләп сығарыла торған изделиеларзең сифатын күтәреү, продукцияның үзенә төшөү хаҡын артабан кәметеүгә һәм накоплениеларзы арттырыуға өлгәшеү мөмкинлектәре барлығын билдәләне. Ошо ай-

[illegible] ҡаилы бюджетҡа Еңел промышленность министерствоһы буйынса түләүзәрзе 19,8 миллион һумға, Аҙыҡ промышленносе министерствоһы буйынса 12,1 миллион һумға һәм Урындағы промышленность министерствоһы буйынса 6,4 миллион һумға арттырыу тураһында тәҡдим индерелә.

Коммуналь хужалыҡтан доходтарзы арттырыу коммуналь предприятиеларзың накоплениелары буйынса расчеттарзы аныҡлаузан килеп сыға. Ошо айҡанлы электр станцияларының түләүе 5 миллион һумға һәм башҡа коммуналь предприятиеларзың түләүе 4,7 миллион һумға арттырыла.

Кооператив промышленностең айырым тармаҡтары расчеттарын ҡарағанда Бюджет комиссияһы промысловый кооперациялардан подоходный налогтарзың керемдәрен, эшләп сығарыла торған продукцияның ассортиментен яҡшыртыу иҫәбенә 14,7 миллион һумға арттырырға, мөмкин, тип тапты.

1951 йылға Государство бюджете буйынса төп үзгәртеүзәр бына ошондай. Өҫтәмә ресурстар доходтарзы арттырыузан 83 миллион һум һәм расходтарзы ҡыҫҡартыузан 3,4 миллион һум, ә бөтәһе 86,4 миллион һум. Бюджет комиссияһы бюджет буйынса доходтарзы расходтарға ҡарағанда арттырыуға юнәлтеүгә тәҡдим итә.

Бюджет комиссияһы Верховный Советтән ошо төзәтеүзәрзе ҡабул итеүзе һәм РСФСР-зың 1951 йылға Государство бюджетен доходтар буйынса 54.262,4 миллион һум, расходтар буйынса 54.132,9 миллион һум күләмендә, доходтарзы расходтарға ҡарағанда 129,5 миллион һум суммаға арттырып раҫлаузы һорай.

Депутат иптәштәр! Хужалыҡ һәм культура төзәлешенең 1951 йылға билдәләнгән программаһын тормошҡа ашырыу өсөн зур материал һәм аҡса ресурстары туплау, әйберзәрзең үзенә төшөү хаҡын артабан арзанайтыуға һәм промышленность предприятиелары, шулай уҡ бөтә хужалыҡ ойошмалары эшенең башҡа сифат күрһәткестәрен яҡшыртыуға өлгәшеү талап ителә.

1951 йылда хужалыҡ предприятиеларзың һәм ойошмаларзың күбеһенә производство программаһын һәм продукцияның үзенә төшөү хаҡын кәметеү буйынса заданиеларзе үтәнеләр генә түгел, бәлки арттырып та үтәнеләр. Шул уҡ ваҡытта Бюджет комиссияһы тарафынан продукцияның үзенә төшөү хаҡын артабан кәметеүгә, накоплениеларзе үстереүгә, производствоның рентабеллеген күтәреүгә зур резервтар һәм мөмкинлектәр барлығы билдәләнде.

1950 йылда республикаһы буйынса Урман промышленносе ағас әзерләү программаһын 68,9 процентҡа һәм ағас сығарыузы 76,8 процентҡа үтәне. Урман промышленносе министерствоһының тресттары һәм промышленность предприятиелары хезмәт хаҡы фонды буйынса 93 миллион һум ҡәҙәр артыҡ тоттолар. Урман промышленносе министерствоһы эшендә зур етешһезлектәр булыуы һәм унда финанс дисциплинаһының боҙолоуы һөзөмтәһендә накоплениелар һәм бюджетҡа түләүзәр буйынса байтаҡ суммаларзағы заданиелар үтәлмәнеләр. Бюджет комиссияһы республика Министрзар Советы РСФСР-зың Урман промышленносе министры иптәш Кудрявцевтан 1951 йылда производство программаһын, продукцияның үзенә төшөү хаҡы буйынса заданиеларзе һәм накопление буйынса пландарзы үтәүзе тәьмин итерлек әшлекле саралар күреүзе талап итергә тейеш, тип иҫәпләй.

Беззең илебеззә отлично сифатлы продукция эшләп сығарыу өсөн ярыш киң ҡолас алды. Ләкин продукцияның юғары сифаты өсөн көрәш бөтә ерзә лә ысын-ысынлап йәйелдерелеп еткәне юҡ әле. 1950 йылда Еңел промышленность министерствоһының ҡайһы бер предприятиеларында изделиеларзең сифатын яҡшыртыу һәм ассортиментен киңәйтеү буйынса заданиелар үтәлмәне. Был предприятиеларзең етәкселәре сифат күрһәткестәре тураһында онотоп, пландың барыһын продукцияның валовой күләме буйынса ғына үтәлеүен тәьмин иттеләр. 1950 йылда продукцияның сифатын түбәнәйтеүзән Еңел промышленность министерствоһының республика предприятиеларында юғалтыузар 25 миллион һум тәшкил иттеләр. Һәр бер предприятиеның етәкселәренән производство планын күләм буйынса ғына түгел, бәлки билдәләнелгән ассортиментта лә үтәлеүен талап итергә кәрәк.

1950 йылда, 1949 йыл менән сағыштырғанда, промышленносте сырьены юғалтыу һәм отходҡа сығарыу кәмене, яғыулыҡ һәм электр энергияһы экономиялыраҡ тотолдо. Ләкин бөтә предприятиелар тарафынан да производстволағы һәм производство әйләнешендәге расходтарзы кәметеүгә, продукцияның үзенә төшөү хаҡын арзанайтыу буйынса заданиеларзе үтәүгә ҡарата кәрәкле саралар ҡабул ителеп еткәне юҡ әле. Урындағы промышленность министерствоһының республика предприятиелары 1950 йылда

[illegible]

ПАРТИЯ ТОРМОШО[illegible]

Коммунистәрзең идея кимәлен күтәр[illegible] тураһында даими хәстәрлек күрәр[illegible]

ВКП(б)-ның Ленин райкомы һәм тәүге ойошмалары коммунистәрзең марксистик-ленинсе белем кимәлдәрен күтәреү буйынса зур эш алып баралар. Түңәрәктәрзә, политик мәктәптәрзә, шулай уҡ үз аллына 2700 коммунист уҡый. Без уҡыу йылының беренсе көндәренән үк занятиеларзең идея йөкмәткеһенә, уҡыу пландарының һәм марксистик-ленинсе теорияны үз алдарына өйрәнеүселәрзең индивидуаль пландарының үтәлешенә даими контроль булдырзыҡ.

Пропагандистар составының сифаты яҡшырзы. Политик мәктәп һәм түңәрәктәргә 250-нән артыҡ пропагандист етәкселек итә. Уларзың күбеһе юғары һәм урта белемлеләр. Пропагандистарзың байтаҡ өлөшөнөң пропаганда эшендә зур стажы һәм бай тәжрибәһе бар.

Яуаплы партия поручениеһен пропагандист иптәш Кәримов намыҫ менән үтәй. Ул етәкселек иткән юғары типтағы түңәрәктең занятиелары регуляр рәүештә, тыңлаусыларзың актив ҡатнашлығында үтә. Пропагандист тарафынан ҡуйылған һорауҙарзы тикшереүгә бөтә коммунистар зә йәлеп ителә. Иптәш Кәримов һәр бер занятие алдынан тәрән дәйөмләштереүзәр яһай, өйрәнелә торған материалды практик бурыстарға тығыз бәйләп алып бара. Шулай уҡ иптәш Кәримов күргәзмә материалдарзы киң ҡуллана. Быларзың бөтәһе лә тыңлаусыларға ныҡлы белем алыуға ярзам итә. Был түңәрәктең тыңлаусылары производствола авангардлыҡ ролен уйнайзар. Мәҫәлән, Гинзбург һәм Савичев иптәштәр етәкселек иткән цехтар айзан-айға производство пландарын арттырып үтәйзәр һәм юғары сифатлы продукция эшләп сығаралар.

Электр оборудованиелары заводы партия ойошмаһы эргәһендә пропагандист иптәш Таукиханов әүҙем эшләп килә. Ул юғары белемле һәм тәжрибәле пропагандист. Иптәш Таукиханов етәкселек иткән түңәрәктең тыңлаусылары ВКП(б) тарихын беренсе сығанаҡтар буйынса өйрәнәләр. Занятиелар юғары идея-теоретик кимәлдә үткәрелә.

Пропагандист иптәш Таукиханов теоретик белем алыузы производстволағы бурыстар менән бик ныҡ бәйләп алып бара[illegible] бел[illegible], түңәрәк члендарын [illegible] рухында тәрбиәләй. Шуның[illegible] түңәрәктең бөтә тыңлаусылары ла [illegible]ство алдынғылары булып торалар.

Консультанттарзың эше лә [illegible] Улар үззәренә беркетелгән коммуни[illegible] марксизм-ленинизмға өйрә булырға [illegible] итәләр, индивидуаль пландарзың [illegible] шенә контроль яһайзар.

Партия район комитете [illegible] ВКП(б) тарихын беренсе сығанаҡ[illegible] йынса өйрәнеүселәр өсөн даими [illegible] итеүсе семинар ойошторолдо. Ул [illegible] эшләп килә. Был үз алдарына уҡ[illegible] ларзың эшен яҡшыртыуға зур ярзам[illegible]

Партия мәғарифе селтәрендә пропа[illegible]дистарзең хәл иткес роль уйнауын [illegible] алып, политик мәктәп һәм түңәрә[illegible] селәренә, консультанттарға ныҡлы [illegible] күрһәтәбез. Пропагандистар өсөн [illegible] ролған семинар регуляр эшләй. Сем[illegible] занятиеларенда методика мәсьәләләр[illegible] тикшерелә, иң яҡшы пропагандист[illegible] тәжрибәләре дәйөмләштерелә.

Айырым партия ойошмаларында пр[illegible]гандистарзең үз-ара бер-береһенең [illegible]тиеларендә ҡатнашыуҙары ҡулла[illegible] башланы. ВКП(б) райкомы асыҡ [illegible] мә занятиеларен үткәреүзе ойош[illegible] Бындай занятиеларзе үткәреү өсөн [illegible] районда етерлек һанда тәжрибәле пр[illegible]гандистар бар.

Райкомдың бюро члендары, пропа[illegible] һәм агитация бүлегенең работниктары[illegible] тәжрибәле йәш пропагандистар менән [illegible]сультациялар үткәрәләр, уларзың за[illegible]тиеларендә булып, кәңәштәр бирәләр.

ВКП(б) райкомы марксизм-ленинизм[illegible] үз алдарына өйрәнеүселәргә ярзамды [illegible]сәйтеүгә зур иғтибар бирә. Лекци[illegible] уҡыла торған лекцияларзың сифатын [illegible]тәреү, уларға үз алдарына уҡыусы ком[illegible]мунистарзең бөтәһенең лә йөрөүен тә[illegible]итеү саралары күрелә. Консультант[illegible]зың эшен яҡшыртыу менән сериоз ш[illegible]ләнәбез.

Партия мәғарифе селтәренең эш т[illegible]һындағы мәсьәләләр райком бюро[illegible] тәүге ойошмаларзың йыйылыштары[illegible] систематик рәүештә тикшерелә.

Г. Вал[illegible]

ВКП(б)-ның Ленин райкомы секретары.

Партия кабинетенең пропагандистарға ярзамы

ВКП(б)-ның Ишембай ҡала комитеты һәм партияның тәүге ойошмалары 1950 һәм 1951 уҡыу йылында коммунистарзең политик уҡыузарын ойоштороу эшендә һизелерлек уңыштарға өлгәштеләр. Үзған уҡыу йылы менән сағыштырғанда партия мәғарифе селтәрендә түңәрәктәр һаны артты. Уларза занятиеларзең тәрән йөкмәткеле итеп үзгарылыуына сериоз иғтибар ителә.

Ҡалала «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса бөтәһе 64 түңәрәк, 25 политик мәктәп һәм иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 7 түңәрәк эшләй. Бынан тыш ВКП(б)-ның ҡала комитеты ҡарамағында киске партия мәктәбе һәм етәксе работниктар өсөн семинар эшләп килә. Коммунистарзан 350 кеше идея-политик белем кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә үз алдарына эшләйзәр. Шулай итеп, партия уҡыузарының бөтә формаһына коммунистарзан 1280 кеше, партияһыззарзан 500 самаһы кеше ылыҡтырылды.

Түңәрәктәр һәм политик мәктәптәр менән 96 пропагандист етәкселек итә. Штаттан тыш 18 консультант марксизм-ленинизм теорияһын үз алдарына өйрәнеүселәргә ярзам күрһәтәләр.

Партия мәғарифе селтәрендә занятиеларзең юғары идея-политик кимәлә пропагандистар кадрзарының яҡшы әзерлекле булыуы менән тәьмин ителә. Шуға күрә быйыл без пропагандистар менән ныҡлы эш алып барыузы иғтибар үзәгендә тотабыз.

Һөзөмтәлә беззең пропагандистарыбыззың күбеһе һуңғы йылда теоретик яҡтан күп үстеләр һәм яҡшы практик күнекмә алдылар. Был, үз сиратында, түңәрәктәрзә һәм политик мәктәптәрзә занятиеларзең юғары идея-теоретик кимәлдә үзғарылыузарына өлгәшеүгә килтерзе. Хәзер пропагандислек мастерствоһына эйә булған бик күп иптәштәрзе миҫалға килтерергә мөмкин. Улар араһында Сыров, Поляков, Савин, Богданов һәм башҡа иптәштәрзең занятиелары йөкмәткеле, йәнле һәм ҡызыҡлы үзғарылалар. Уларзың ыңғай эш тәжрибәләре ҡаланың бөтә пропагандистары араһында таратыла.

Пропагандистарзың идея-теоретик һәм методик белем кимәлдәрен күтәреү маҡсатында ВКП(б) ҡала комитеты эргәһендә уҡыу йылы башланғанға тиклем ес йыллыҡ һәм ике аҙналыҡ курстар үткәрелде.

Уҡыу йылы башланыу менән партия кабинетында даими семинарзар эшләп килә. Пропагандистар һәм консультанттар өсөн беззә бөтәһе биш семинар эшләй. Пропагандистар әзерләүзең төп формаһы семинар булыуын иҫкә алып, ВКП(б) ҡала комитеты бюроһы улар менән етәкселек итеүзе теоретик һәм методик яҡтан яҡшы әзерлекле иптәштәргә тапшырзы. Консультанттар һәм ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса юғары типтағы түңәрәктәрзең пропагандистары семинары менән ҡала комитеты секретары иптәш Еникеев етәкселек итә.

Ҡала комитетының штаттағы консультанты иптәш Шейберг политик мәктәптәр пропагандистары семинарына етәксе[illegible]

Һәр семинар партия кабинеты эш[illegible]нән төзөлгән ныҡлы план буйынса [illegible]ләй. Семинарзың етәкселәре иптәш [illegible] планында күрһәтелгән темаларға л[illegible]лар уҡыйзар, семинар занятиеларын [illegible]ралар һәм түңәрәктәрзә занятиеларзе [illegible]ле итеп үзғарыу буйынса күрһәтмә[illegible]ләр. Семинарза лекциялар уҡыу [illegible] без яҡшы квалификациялы лектор[illegible] ылыҡтырзыҡ. В. И. Лениндың «Мате[illegible]риализм һәм эмпириокритицизм» [illegible] хезмәте буйынса лекцияны Стерли[illegible]маҡ уҡытыусылар институтының [illegible]сизм-ленинизм нигеззәре кафедраһы [illegible]тыусыһы иптәш Юлдашбаев уҡыны.

Уҡыу йылы башланғанда бары [illegible] политик мәктәптәрзең пропаганди[illegible] өсөн 10 тапҡыр, «ВКП(б) тарихының ҡыҫ[illegible]ҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәктәре[illegible] пропагандистары өсөн 10 тапҡыр [illegible] консультанттар өсөн 6 тапҡыр се[illegible] үзғарзыҡ. Семинарза пропагандистар[illegible] литик мәктәптәрзә һәм түңәрәктәрзә з[illegible]нятиелар үзғарыу методикаһына өйр[illegible]гә айырыуса иғтибар итәбез. Семина[illegible]зың етәкселәре уҡыу планының һәр [illegible] темаһын занятиеларға дөрөҫ бүлеү [illegible]һында, беседалар үзғарғанда тыңл[illegible]ларға нindәй һорауҙар ҡуйырға, зан[illegible]ларға әзерләнеү өсөн төп һәм ярзам[illegible] әзәбиәттәр күрһәтәләр. Большевиктар [illegible]тияһы тарихының Октябрь революц[illegible]нан һуңғы осорон өйрәнеү буйынса [illegible] планының 13-се һәм 14-се темал[illegible] кәрәк булған программалар менән [illegible]гандистарзе тәьмин иттек. Был пропа[illegible]дистарға занятиеларға әзерләнеүзе [illegible] күп еңеләйтте.

Әлбиттә, пропагандистар менән эш [illegible] барыузы семинар занятиелары [illegible] менән генә сикләп ҡалмайбыз. [illegible] өсөн партия кабинетында даими ко[illegible]тация эшләй. Бында пропагандистар [illegible] кән үззәрен ҡыҙыҡһындырған һорау[illegible]тулы яуап алалар. Партия кабине[illegible] лиотекаһында нәүбәттәге занятиеға [illegible]ләнеү өсөн кәрәк булған әзәбиәттәр [illegible] гәзмәһе ойошторолә. ВКП(б) тарихын [illegible]рәнеүгә ҡарата сығарылған альбо[illegible] һәм башҡа күргәзмә пособиелар [illegible]һынса файзаланылалар. Пропаганди[illegible] семинарзарға зур теләк менән бара[illegible] Унда уҡылған лекцияларзы һәм ме[illegible] күрһәтмәләрзе язып баралар һәм зан[illegible]ларға әзерләнеп килә[illegible]. Пропаган[illegible] менән үткәрелгән эшкә тулы уңыт[illegible] барабыз.

Ләкин без пропагандистарға ярзам [illegible]зә бөтә мөмкинлектәребеззе файза[illegible] бөтмәйбез әле. Алдынғы пропаганди[illegible]зең эш тәжрибәләрен бөтә пропаган[illegible]тәргә таратыуға аз иғтибар бирелде. [illegible]тия кабинетында уларзың күргәзмә [illegible]тиелар үткәреүзәрен ойошторманыҡ. Был етешһезлектәрзе бөтөрөү өсөн [illegible] сараларзы күрәбез.

Пропагандистарға әзләкһез ярзам [illegible] беззә уҡыу йылын уңышлы тамамл[illegible] мөмкинлек бирәсәк.

П. Наумов[illegible]

партия кабинеты мөдире.

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Беҙ сессияларҙы нисек үткәрәбеҙ

Урындағы һәр бер Советтең яҡшы эшләүе, уның исполкомдарының бөтә депутаттарҙы ла актив ҡатнаштырыуына [illegible] сессиялары [illegible] ҙур роль уйнай.

Беҙҙең район Советы депутаттарының [illegible]

Район Советының сессиялары нисек үтә һуң? [illegible]

[illegible]

Сессия ниндәй генә яҡшы әҙерлек менән үтмәһен, [illegible]

[illegible]

Сессияларҙы, Конституцияға ярашлы рәүештә, регуляр үткәреп торорға кәрәк. [illegible]

Практика, сессияла күп мәсьәләләр ҡуйыу [illegible]

[illegible] 1951 — 1952 уҡыу йылына әҙерлек» мәсьәләһен [illegible]

Шулай итеп, беҙ сессияларҙы [illegible]

Урындағы Советтарҙың сессиялары ролен күтәреү, [illegible]

Ғ. Хафизов,
Шаран район Советы исполкомы председателе.

Сауҙа эшен баһаламайҙар

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа беҙҙең илебеҙ халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында ла гүзәл еңеүҙәргә өлгәште. Был, партия һәм хөкүмәтебеҙгә киң ҡулланыу тауарҙарының ваҡлап һатыу хаҡтарын систематик арзанайта барыуға, совет һумының һатып алыу һәләтлеген әленәнәле күтәрә барыуға мөмкинлек бирҙе. Большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына хаҡтарҙы дүртенсе тапҡыр тағы арзанайтыу үткәрҙе. Быларҙың бөтәһе лә сауҙа ойошмаларына эште өлгөлө ҡуйыу өсөн ҙур мөмкинлектәр тыуҙыралар.

Ләкин Ғафури районының сауҙа ойошмалары — райпотребсоюз һәм Красноусол быяла заводының ОРС-ы етәкселәре совет сауҙаһын бөгөнгө талаптар юғарылығына ҡуйыу өсөн эшлекле саралар күргәндәре юҡ әле. Районның күпселек сельполары тауар әйләнеше пландарын үтәмәй киләләр.

Хеҙмәтсәндәрҙең культура тауарҙарына ҡарауҙары айырыуса ҙур. Ә шулай ҙа сельполарҙа гармон, патефон, мандолина кеүек культура тауарҙарын күрмәҫһең.

— Район үҙәгенә барып патефон алабыҙ, ул да пластинкаһыҙ була, бигерәк тә башҡорт, татар телдәрендәге пластинкаларҙы табыуы ҡыйын, тиҙәр Ерек ауылының пайщиктары. Райсоюз радиоприемниктар өсөн питаниелар килтертмәй. Ҡаҙан, түбә ҡалайы, буяу кеүек төҙөлөш материалдары, балта, бысҡы, табағас, уҡыуат, суйын көршәктәр кеүек йорт кәрәк-ярактары менән сауҙа итеү насар ойошторолған. Был тауарҙар һирәк һәм бик аҙ килтерелә.

Китап менән сауҙа итеүгә әһәмиәт бирелмәй. Башкниготоргтың район магазины юнләп эшләмәй. Райпотребсоюз системаһында ла китап менән сауҙа итеүҙе һуңғы дәрәжәләге эш итеп ҡарайҙар.

Сауҙа системаһына үтеп ингән осраҡлы кешеләр — жуликтар тарафынан кооператив милкен әрәм-шәрәм итеү ваҡиғалары ла аҙ түгел.

Был фактарҙың урын алып килеүен райпотребсоюз етәкселәренең кадрҙарҙы һайлап алыуға һәм уларҙы политик тәрбиәләүгә бөтөнләй иғтибарһыҙ ҡарауҙары менән генә аңлатырға мөмкин. Бында район Советы исполкомын да ситләтеп үтеп булмай. Сөнки ул сауҙа ойошмаларының эштәрен үҙенең даими контроллегө аҫтына алырға, районда сауҙа эштәрен яҡшыртыу өсөн конкрет саралар күрергә тейеш ине. Ләкин беҙ быларҙы күрмәйбеҙ.

Пайщиктар районда совет сауҙаһын тамырынан яҡшыртыуҙы талап итәләр һәм был талаптар бик урынлы.

Й. Ғәлиев.

Ул тағы ла командировкаға йыйына

Берәр кампанияны үткәреү буйынса урындарға партия, совет активынан вәкилдәр ебәреү тураһында һүҙ ҡуҙғалһа, Әбйәлил район Советы башҡарма комитетының культура-ағартыу эштәре бүлеге мөдире иптәш Әбүбәкиров һәр ваҡыт:

— Миңә берәр алыҫыраҡ ауылға ебәрһәгеҙ ине, — ти.

Уның был һорауы ҡәнәғәтләндерелә. Иптәш Әбүбәкировтың район үҙәгенән 10 — 15 километр алыҫлыҡтағы ауылдарға барған ваҡыты бик һирәк була.

— Бына бит, — ти ул ҡайтҡас (ә ул район үҙәгенә бөтә кешенән дә һуңра ҡайтып ҡайта), — үҙ эшемдә эшләргә ваҡыт та табып булмай. Командировка ла, командировка...

Абзан район Советының ғинуар айында булып үткән беренсе сессияһында ла ул ошондай уҡ төндә сығыш яһаны:

— Районда культура-ағартыу эшенең тейешле кимәлдә булмауы, колхоздарҙа клубтарҙың төҙөлмәүе өсөн командировкала йөрөгән кешене ғәйепләргә мөмкинме? Каганович исемендәге колхозда клубҡа мин һалып ҡуйғандар икән, мин ни хәл итәйем һуң?..

Депутаттар был сығышҡа төҙәтмә индерҙеләр. Улар, Әбүбәкировтың культура-ағартыу эше менән етерлек тиклем шөғөлләнмәүен тәнҡитләп, ауылдарҙа, халыҡ араһында йөрөгәндә бик күп эштәр башҡара ала икәнен һәм уның төп эше халыҡтан һис тә айырылғыһыҙ икәнен әйтеп үттеләр. Сессия ҡабул иткән ҡарарҙа ла иптәш Әбүбәкировты кәрәгенсә эшләргә мәжбүр итеүсе пункт бар ине.

Бына ике ай үтте. Ошо ваҡыт эсендә иптәш Әбүбәкиров үҙе етәкселек иткән бүлектең эшен ҡайтанан ҡора ала ине. Үкенескә ҡаршы, үҙгәреш юҡ. Был бүлек һаман да элеккесә эш итә: ул лекцион эш менән шөғөлләнмәй клубтарға, уҡыу өйҙәренә етәкселек насар. Районда художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәренең олимпиадаһын үткәреү буйынса бер ниндәй ҙә эш алып барылмай.

Яҙғы сәсеү башланды һәм иптәш Әбүбәкиров тағы командировкаға йыйына. ВКП(б)-ның Абзан районы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советы башҡарма комитеты хәҙер ҙә уның район үҙәгенән ситтә булған ауылға ебәреү тураһындағы һорауын ҡәнәғәтләндерерме, — уныһы билдәһеҙ. Шулай ҙа Әбүбәкиров йыйына һәм ул яңынан бер-ике айға үҙен борсотмау өсөн сәбәп табасаҡ.

Д. Мәһдиев.

Тел ғилеме тураһында иптәш Сталиндең хеҙмәттәре нигеҙендә башҡорт телен өйрәнеүҙә яҡындағы бурыстар

И. В. Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән классик хеҙмәте фәндең бөтә тармаҡтарын — философияны, политик экономияны, тарихты, әҙәбиәтте өйрәнеү өсөн һәм уларҙы ижади алға ебәреү өсөн төп күрһәтмә булып тора. Иптәш Сталиндең ошо хеҙмәте фәнде яңы гениаль асыштар һәм положениелар менән байытты, тел ғилеме өлкәһендә совет фәненең ныҡлы теоретик нигеҙҙәрен һалды, тел ғилемендә тәрән боролош яһаны.

Тел тураһында марксизмса булмаған аңлатыуҙы фаш итеп, Маркстың, Энгельстең һәм Лениндең тел ғилеме мәсьәләләре буйынса булған ҡараштарын артабан үҫтереп, И. В. Сталин телгә ҡарата классик марксистик билдәләү бирҙе. **«Тел шундай средство, ҡорал ул, — тип әйтә иптәш Сталин, — уның ярҙамында кешеләр бер-береһе менән аралашалар, фекер алышалар һәм үҙ-ара аңлашыуға өлгәшәләр. Тел, туранан-тура фекерләү менән бәйләнештә булып, фекерләү эшенең һөҙөмтәләрен, кешенең аңлап белеү эшенең уңыштарын һүҙҙәрҙә, һөйләмдәрҙәге һүҙ бәйләнештәрендә теркәй һәм нығыта, һәм шулай итеп, кешелек общество һында фекер алыушыуҙы мөмкин яһай».**

Иптәш Сталин, тел бөтә обществоны берҙәй хеҙмәтләндерә, ул базистең өҫҡормаһы булып тормай һәм ул синфи ҙа түгел тип әйтә. Тел кешенең башҡарған эшенең бөтә сфералары эшмәкәрлеге менән — производствоан базисҡа тиклем, базистан өҫҡормаға тиклем бәйләнгән. Телдең грамматика төҙөлөшө һәм уның һүҙлек фонды телдең нигеҙен, уның асылын, спецификаһын тәшкил итә һәм ул халыҡтарҙы, милләттәрҙе көслөк юлы менән ассимиляциялау, уларҙың телдәрен юҡҡа сығарыу тәңгәлендә яһаған һәр төрлө маташыуҙарға ҡаршы ныҡлы көс булып тора.

* * *

И. В. Сталиндең тел ғилеме тураһындағы яңы гениаль хеҙмәте тел тураһындағы фәндә ысын сәскә атыуҙың киң юлына сығарҙы. Иптәш Сталиндең был яңы хеҙмәте башҡорт әҙәби телен өйрәнеү һәм алға ебәреү буйынса ла программа булып тора.

Октябрь революцияһына тиклем күп кенә кешеләр башҡорт теленең булыуын инкар итеп килделәр. Халыҡтан ситләшкән һәм уны күрә алмаған башҡорт буржуазияһы, үҙенең туған теленән башҡа йәшәй алмауына ҡарамаҫтан, боҙоҡ телдә һөйләшергә тырышты. Татар буржуазияһы һәм руханиҙары башҡорт телен тағы ла көслөрәк инкар иттеләр. Башҡорт теле татар теленең бер диалекте итеп ҡаралды.

Совет власеның беренсе йылдарында уҡ башҡорт әҙәби телен тыуҙырыу һәм үҫтереү мәсьәләһе алға килеп баҫҡас, ул ваҡыттағы ҡайһы бер «деятелдәр» башҡорт әҙәби телен үҫтереүгә бөтөнләй ҡаршы булдылар. Бындай ҡараш тиҙ генә бөтөрөлмәне һәм ошо зарарлы тенденция В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең етәкселегендә һәм туранан-тура ярҙамында, большевиктар партияһының ярҙамында ғына йолҡоп ташланды.

Утыҙ йылдан артыҡ йәшәү осоронда Совет Башҡортостаны, туғандаш башҡа республикалар кеүек, танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе, уның социалистик культураһы сәскә атты. Башҡорт халҡы социалистик милләт булып, уның теле государственный тел, социалистик милләт теле булып әүерелде. Был — Октябрь социалистик революцияһының бөйөк ҡаҙанышы.

Иптәш Сталин үҙенең хеҙмәттәрендә, СССР-ҙың башҡа халыҡтары теле менән бергә, башҡорт теле тураһында ла яҙа. «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән үҙенең хеҙмәтендә иптәш Сталин «тел үлә барған иҫке ҡоролошто ла, күтәрелеп килгән яңы ҡоролошто ла берҙәй уҡ хеҙмәтләндерә ала» тигән мәсьәләгә ҡағылып, былай тип яҙа: **«Рус теленең, хәҙерге рус обществоһының социалистик ҡоролошон һәм социалистик культураһын хеҙмәтләндергән кеүек уҡ, Октябрь переворотына тиклем рус капитализмын һәм рус буржуаз культураһын да шулай уҡ яҡшы хеҙмәтләндереүе бер кемгә лә сер түгел.**

Украин, белорус, үзбәк, грузин, әрмән, эстон, латыш, литва, молдаван, татар, әзербайжан, башҡорт, төрҡмән һәм башҡа совет милләттәренең телдәре тураһында ла шуны уҡ әйтергә кәрәк, был телдәр яңы, социалистик ҡоролошҡа хеҙмәт иткән кеүек уҡ, ул милләттәрҙең иҫке, буржуаз ҡоролошона ла шулай уҡ яҡшы хеҙмәт иткәндәр».

Шулай итеп, И. В. Сталин башҡорт теле, СССР-ҙа йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың телдәре кеүек үк, социалистик ҡоролошто хеҙмәтләндергәнлеген билдәләп үтә.

Беҙҙең юлбашсыбыҙҙың башҡорт теленә ҡарата был баһаһы телде өйрәнеү һәм уны артабан үҫтереү, тел ғилемен Маррса ҡараштан таҙартыу һәм тел тураһында иптәш Сталиндең учениеларен практик тормошҡа ашырыу эшендә беҙгә бик ҙур яуаплылыҡ йөкмәтә.

Башҡорт теле алға китә, байыҡтырыла, уның грамматика төҙөлөшө камиллаштерелә, был эштә башҡорт теленә рус теле айырата яҡшы йоғонто яһай. Башҡорт теле рус һәм татар телдәре менән бер рәттән, беҙҙең республикабыҙҙа социалистик ҡоролошто хеҙмәтләндерә һәм илебеҙҙә коммунистик общество төҙөү өсөн уңышлы ҡорал алып барырға ярҙам итә.

Башҡорт әҙәби телен тыуҙырыу һәм үҫтереү эше бөйөк большевиктар партияһының өҙлөкһөҙ хәстәрлеге һәм етәкселеге менән алып барылды. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә был юлда байтаҡ уңышлыҡтарға өлгәшелде. Һуңғы йылдарға тиклем төп иғтибар беҙҙә башҡорт теленең төп һүҙлек фондын һәм грамматика төҙөлөшөн өйрәнеүгә йүнәлтелде. Баҫып сығарылған дәреслектәр, башланғыс һәм урта мәктәптәр өсөн төҙөлгән программалар һәм башҡорт теленең мөһим мәсьәләләре буйынса башҡорт лингвистарының хеҙмәттәре һәм баҫып сығарылған һүҙлектәр быны асыҡ дәрәсләйҙәр.

Ләкин республикала хужалыҡ-культура үҫеше менән сағыштырғанда, башҡорт теленең ҡаҙаныштары ҡәнәғәтләнерлек түгел әле. Билдәле булған дискуссияға һәм иптәш Сталиндең тел тураһындағы яңы хеҙмәттәре сыҡҡанға тиклем тел ғилеме, башҡа республикаларҙа булған кеүек, беҙҙә лә ул билдәле дәрәжәлә торғонлоҡ хәлендә йәшәне.

Академик Н. Я. Маррҙың «Тел тураһында яңы учение», тип йөрөтөлгән боҙоҡ һәм зарарлы учениеһы беҙҙең республикабыҙҙағы ғилми работниктарға уларҙың тел, әҙәбиәт һәм тарих буйынса алып барған ғилми тикшеренеү һәм практик эштәренә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса яҙылған дәреслектәргә һәм программаларға йоғонто яһап килде. Шулай уҡ был йоғонто юғарыла әйтелгән хеҙмәттәр аша мәктәптәргә, училищеларға һәм институттарға барып инде. Мәҫәлән, Мәжит Ғафури исемендәге ғилми-тикшеренеү институты, шулай уҡ Башҡорт Государство педагогия институты дискуссияға тиклем үҙҙәренең эштәрендә Н. Я. Маррҙың «яңы учениеһына» бик йыш ҡына мөрәжәғәт итәләр ине. Был институттар 1950 йылдың яҙында Марр учениеһына арнап махсус сессия үткәрҙеләр. Башҡорт лингвистарының, әҙәбиәтселәренең һәм тарихсыларының хеҙмәттәрендә Маррҙың зарарлы йоғонтоһо менән бәйләнешле булған хаталарҙы йыш ҡына күрергә мөмкин. Ҡағыҙҙа рәүешендә тел өҫҡорма итеп һәм синфи күренеш итеп ҡаралды. Иптәш Харисовтың әҙәбиәт теорияһы буйынса 1947 йылда баҫып сығарылған китабында тел һәм грамматика синфи тип раҫлана. Ошо уҡ автор 1944 йылда баҫып сығарылған «Башҡорт телендә ҡылым төрҙәренең категорияһы» тигән икенсе бер хеҙмәтендә шулай уҡ Маррҙың учениеһына нигеҙләнә.

Иптәш К. Әхмәров 1941 йылда сығарған бер дәреслегендә Марр положениеһына нигеҙләнеп эш иткән.

Х. Фәритов һәм Ғ. Ғүмәров иптәштәрҙең педучилищелар өсөн яҙған «Башҡорт теленең грамматикаһы» дәреслегендә (редакторы филология фәндәре кандидаты Ж. Кейекбаев, 1949 йылда баҫылған) бик ҙур хаталар һәм кәмселектәр бар. Дәреслек «редакторҙан» тигән зарарлы һүҙ башы менән асыла. Был баш һүҙҙә башҡорт халҡы өсөн дөйөм ҡабул ителгән әҙәби телдә балаларҙы уҡытыу зарарлы, сөнки әҙәби тел балаларҙың телен боҙа, тип әйтелә. Дәреслек Н. Я. Маррҙың «тел тураһында яңы учениеһына» таянып, марксизмға ҡаршы ҡуйылған положениеларҙан сығып төҙөлгән. Авторҙар Маррҙы иң күренекле марксист-лингвист итеп күрһәтәләр. Лексика бүлегендә авторҙар «телдең үҫеше общество формаһынан... килә», «Производство ҡоралдары һәм средстволары ниндәй синыф ҡулында булһа, тел дә һәм уның һүҙлек составы ла шул синыфтың идеологияһына бойондороҡло була», өҫтөнлөк итеүсе синыфтар үҙ интерестарын һаҡлау маҡсатында үҙенең телен тыуҙыра, тел синфи һәм башҡалар тип күрһәтәләр. (21 бит).

Был дәреслектә грамматика тураһында аңлатма бик ныҡ бутап бирелгән. Мәҫәлән, авторҙар: «Телде һәм уның законларын өйрәнеү менән бергә, беҙ фекеребеҙҙең лабораторияһына ла инабеҙ» тип яҙалар. (49 бит). Был авторҙарҙың телгә фекерләүҙән айырым нәмә итеп ҡарағанлыҡтарын күрһәтә.

Башҡорт теленең диалекттарын тикшергәндә лә дәреслектә дөрөҫ булмаған ҡараштар осрай. Авторҙар, быға тиклем йәшәп килгән билдәле ҡаҙаныштарҙан һәм һығымталарҙан баш тартып, уйҙырма диалекттар тыуҙырыу юлы менән киткәндәр. Улар йә ырыу, йә территориаль, йә этник билдәләргә нигеҙләнеп, диалекттар тураһында хата аңлатма бирәләр. Бында беҙҙә ғилми принцип юҡ.

Н. Я. Маррҙың «тел тураһында яңы учение» тип аталған учениеһы менән бәйләнешле хаталар, кәмселектәр тел ғилемендә генә ҡалып ҡалмайҙар. Бындай хаталар Башҡортостан тарихын һәм әҙәбиәтен өйрәнеү мәсьәләләрендә лә осрайҙар. Мәҫәлән, ошо мәҡәләнең авторы «Башҡортостандың Мәскәү государствоһына ҡушылыуы» тигән хеҙмәтендә башҡорт халҡының этногенезы мәсьәләһен өйрәнгәндә академик Н. Я. Маррҙың авторитетына нигеҙләнә һәм уның хата һығымталарын килтерә.

Бындай хаталар Мәжит Ғафури исемендәге институт тарафынан Башҡортостан тарихына арналып әҙерләнгән башҡа эштәрҙә лә булдылар.

И. В. Сталиндең гениаль хеҙмәттәрендә тел ғилеменең мөһим проблемалары ҡуйылғандар һәм хәл ителгәндәр, уларға төп күрһәтмәләр һәм йүнәлештәр бирелгән. Иптәш Сталиндең тел ғилеме тураһындағы учениеһын өйрәнеп, беҙ башҡорт теле буйынса ҙур ижади һәм практик эш йәйелдерергә тейешбеҙ.

И. В. Сталин телгә ниндәй халыҡтың телен тикшергәндә төп иғтибарҙы беренсе нәүбәттә нимәгә йүнәлдерергә кәрәк икәнлеген асыҡ итеп билдәләне. Төп иғтибар ошо телдә һөйләүсе халыҡтың бөтә тарих буйынса тулыландырыла барған, төп һүҙлек фондына йүнәлтелергә, общественный ҡоролоштоң, производствоның, культураның һәм фәндең алға китеүе әйтәндәй алды барлыҡҡа килгән аңы һүҙҙәргә йүнәлтелергә, телдең һаман камиллаштырыла барған грамматика төҙөлөшөнә йүнәлтелергә тейеш.

Ошо юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып эш иткәндә, беҙҙең алдыбыҙға башҡорт әҙәби телен һәм уның мөһим мәсьәләләрен өйрәнеү буйынса конкрет бурыстар килеп баҫа. Әлегә тиклем башҡорт теленең төп һүҙлек фондын һәм тотош лексика байлығын өйрәнеү буйынса үткәрелгән эштәр ҡәнәғәтләнерлек түгел әле.

Төп иғтибар нәмәгә йүнәлтелергә тейеш? Әлегә тиклем лингвистар халыҡ менән яҡын бәйләнештә булмаһылар, урындарҙа һирәк булдылар, халыҡтың йәнле һөйләү телен етерлек тиклем өйрәнмәнеләр. Башҡортостан райондарына телдең лексика байлығын һәм уның диалекттарын өйрәнеү буйынса экспедициялар сығарыу һуңғы йылдарҙа һирәк осрай торған күренеш булып әүерелде. Республиканың башланғыс һәм урта мәктәптәрендә эшләүсе уҡытыусылар армияһы менән бәйләнеш юлға һалынмаған. Интеллигенцияның ҡалған өлөшө менән, атап әйткәндә, район газеталары работниктары менән эшләүгә ҡарата ла шул уҡ һүҙҙе әйтергә кәрәк. Улар менән тығыҙ бәйләнеш тотоу һәм бергәләп эшләү, райондарҙа хәбәрселәр пункттарын ойоштороу, һис шикһеҙ, яҡшы һөҙөмтәләр бирәсәк. Республика райондарына экспедициялар ебәреү мәсьәләһе хәл ителергә тейеш. Ойошторолаторған экспедициялар составына Башҡортостан педагогия институтының һәм башҡа институттарҙың студенттары араһынан йәш кадрҙарҙы ла индерергә кәрәк. Экспедициялар Башҡортостандың райондарын һәм зоналарын планлы өйрәнеү иҫәбенән сығып ойошторолорға тейеш. Башҡорт теленең һүҙлек составын планлы өйрәнеү мөмкинлеге экспедициялар ебәреү менән генә тамамланмай. Ғилми работниктар, лингвистар, педагогтар һәм башҡалар райондарға систематик барырға һәм халыҡтың лексика байлығын өйрәнергә тейештәр. О быға тиклем ошондай ваҡиғалар була ине: ғилми сотрудниктар башҡорт теленең мөһим мәсьәләләре буйынса йылдар буйына шөғөлләнеп һис ваҡытта ла кабинеттан сыҡмайҙар, райондарға бармайҙар һәм халыҡ менән аралашмайҙар ине.

Башҡорт теленең лексика байлығын тулы һәм тәрән өйрәнеү башҡорт әҙәби теленең бик күп мәсьәләләрен, атап әйткәндә, башҡорт теленең лексика нормаһын билдәләү мәсьәләһен уңышлы хәл итергә мөмкинлек бирер.

Һүҙлектәр төҙөү эше башҡорт теленең һүҙлек фондын тулы һәм систематик өйрәнеү менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Төҙөләсәк һүҙлектәрҙең уңышлы һәм яҡшы сифатлы булыуы шунан тора. ВКП(б) Өлкә Комитеты һүҙлектәр, шул иҫәптән айырым дисциплиналар буйынса терминология һүҙлектәре төҙөүҙе һәм баҫып сығарыуҙы тиҙләтеү кәрәклегенә бер нисә тапҡыр конкрет күрһәтмәләр бирҙе. Дөрөҫ, был йүнәлештә бер ни тиклем эштәр башҡарылды, ләкин улар ғына беҙҙе ҡәнәғәтләндерә алмай әле. Хәҙерге ваҡытта башҡортса-русса һүҙлек төҙөү эше башланды. Бының өсөн етмеш мең самаһы һүҙҙән торған һүҙлек фонды булдырылды һәм булдырыу дауам иттерелә. Был эштең ҙур әһәмиәтле һәм яуаплы икәнлеген айырата билдәләп үтергә кәрәк. Бындай һүҙлек фонды беҙҙә беренсе тапҡыр төҙөлә. Һүҙлек фондын мөмкин тиклем күберәк туплау һәм башҡортса-русса һүҙлек төҙөүҙе тиҙләтеү — беҙҙең яҡындағы мөһим бурысыбыҙ. Шулай уҡ беҙгә башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәренең телен, ваҡытлы матбуғат телен өйрәнергә кәрәк. Марксизм-ленинизм классиктары әҫәрҙәрен тәржемә итеү телен өйрәнеүгә айырыуса иғтибар итергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта квалификациялы лингвистар марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен тәржемә итеүгә систематик ярҙам күрһәтергә тейештәр. Беҙҙең алдыбыҙҙа марксизм-ленинизм классиктарының хеҙмәттәрен тәржемә итеү теорияһын һәм практикаһын асыҡлау һәм камиллаштырыу буйынса ҙур эштәр тора.

Фәндең төрлө тармаҡтары, мәҫәлән, ауыл хужалығы, урман хужалығы, медицина, тел, әҙәбиәт һәм общественный-политик фәндәр буйынса терминологик һүҙҙәр төҙөү эштәре алға ҡуйылған. Ләкин терминологик һүҙлектәрҙе төҙөү буйынса быға тиклем беҙҙә йәшәп килгән практиканы нормаль хәл тип иҫәпләп булмай. Ғәҙәттә был эш менән нигеҙҙә Мәжит Ғафури исемендәге ғилми-тикшеренеү институты шөғөлләнеп килде. Был эштә ул айырым специалистарҙы бары консультант, рецензент һәм редактор сифатында ғына файҙаланды. Әлбиттә, был эш менән етәкселек итеүе һәм башҡортса терминдарҙың уның тарафынан башҡарылыуы дөрөҫ. Ләкин Мәжит Ғафури исемендәге институттың республикабыҙҙағы башҡа институттар һәм ғилми учреждениелар менән тығыҙ бәйләнештә булмауы, уларҙың ғилми работниктарын һүҙлектәр төҙөү эшенә ылыҡтырмауы нормаль хәл түгел. Уларҙағы специалистарҙың туранан-тура ҡатнашлығынан башҡа яҡшы терминологик һүҙлектәр төҙөү бик ауыр. Шуның өсөн бынан һуң юғары уҡыу йорттарындағы, ғилми-тикшеренеү институттарындағы һәм башҡа ғилми учреждениелардағы специалистар терминологик һүҙлектәр төҙөү эшенә мотлаҡ ылыҡтырылырға тейештәр.

Башҡорт әҙәби теленең грамматикаһын артабан эшләү башҡорт лингвистарының яуаплы эше булып иҫәпләнә. Беренсе нәүбәттә башҡорт әҙәби теленең ғилми синтаксисын эшләргә кәрәк, сөнки әлегә тиклем бары тик мәктәп синтаксисы ғына эшләнгән.

Башҡорт теле, туғандаш башҡа халыҡтарҙың теле кеүек, рус теленең йоғонтоһонда үҫә. Башҡа халыҡтарҙың телдәре лә шулай уҡ бер-береһенә йоғонто яһайҙар. Рус теле дөйөм аңлашыла торған терминдарҙы һәм һүҙҙәрҙе үҫтереүгә бик ҙур ярҙам итә, ул башҡорт әҙәби теленең грамматикаһын камиллаштереүҙә прогрессив йоғонто яһай. Һис һүҙһеҙ был процесс өйрәнелергә һәм лингвистарыбыҙ тарафынан дөйөмләштерелергә тейеш.

Педагогия һәм уҡытыусылар институттарының тел факультеттары өсөн хәҙергә башҡорт теле, башҡорт теленең тарихы һәм диалектология буйынса дәреслектәрҙең булмауы һис ғәфү итерлек хәл түгел. Сөнки уларҙан башҡа тел буйынса юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләп булмай. Шуның өсөн юғарылағы дәреслектәрҙе яҡын йылдарҙа булдырыу эше беҙҙең лингвистарҙың мөһим бурысы булып тора.

Орфографияны артабан камиллаштереү буйынса эште ҡыйыу дауам иттерергә, исем һүҙҙәрҙең һәм географик исемдәрҙең, фәнни терминдарҙың, бигерәк тә ҡушма һүҙҙәрҙән торған терминдарҙың дөрөҫ яҙылышын стандартлаштырыуға айырата иғтибар итергә кәрәк. Башҡорт теле орфографик һүҙлегенең ғилми принциптарға яуап бирерлек төҙәтелгән һәм өҫтәлгән баҫмаһын баҫып сығарыу яҡындағы бурыс булып тора.

Тел тураһындағы дискуссиянан һәм И. В. Сталиндең гениаль хеҙмәттәре донъяға сыҡҡандан һуң республикабыҙҙағы лингвистарҙың эше һиҙелерлек йәнләнде. Коллектив хәл итеүҙе талап иткән бик мөһим принципиаль мәсьәләләр күтәрелә. Тел ғилеменең мөһим мәсьәләләре буйынса ғилми сессиялар ойоштороуҙы йышыраҡ үткәреү бурысы алға ҡуйыла. Шуның өҫтөнә республика күләмендә икенсе тел конференцияһын үткәреү ваҡыты етте инде (беренсе конференция 1940 йылда үткәрелгәйне.) Ул конференцияла иптәш Сталиндең хеҙмәттәре нигеҙендә башҡорт телен артабан үҫтереүҙең төп мәсьәләләре тикшерелергә тейеш.

Башҡорт теленең мөһим проблемаларын өйрәнеү һәм эшләү өлкәһендә беҙҙең бурыстарыбыҙ ҙур. Был бурыстарҙы уңышлы үтәү өсөн, ғилми тикшеренеү учреждениеларындағы, юғары уҡыу йорттарындағы лингвистарҙың көстәрен дөрөҫ туплай белергә, уларҙың эшен башҡорт теле өлкәһендәге кисектергеһеҙ бурыстарҙы хәл итеүгә йүнәлтергә кәрәк.

Ә. Усманов,
Тарих фәндәре кандидаты.

Алдынғылар бүләкләнде

Ошо көндәрҙә ВКП(б)-ның Ҡыйғы район комитеты һәм район Советы исполкомы ағас әҙерләү һәм ташыу эше буйынса социалистик ярышҡа йомғаҡ яһаны. Ярышта «Нур», «Ирек», «Политотдел» һәм Ленин исемендәге колхоздар еңеүселәр тип табылды.

Сезон заданиеһының арттырылып үтәлеүен тәьмин иткәндәре өсөн Үрге Ҡыйғы ауыл Советы председателе Хәжиев, Ленин исемендәге колхоз председателе Ибәтуллин, шул уҡ колхоздың ағас ҡырҡыусылар бригадаһы бригадиры Абдуллин, «Политотдел» колхозы председателе Дубовик, «Нур» колхозы председателе Зарифуллин иптәштәр костюмлек отрез менән, Ленин исемендәге колхоздың ағас ташыусыһы Хәжиев Мәзһәр, Фрунзе исемендәге колхоздың ағас ташыусыһы Әминев, «Ирек» һәм «Беренсе Май» колхоздарының председателдәре Мурзин һәм Хужаахмәтов иптәштәр ҡиммәтле әйберҙәр менән бүләкләнделәр.

З. Вәлиев.

Мәктәптәрҙә балалар библиотекаһы

Петровск. Үткән йылдарҙа Маҡар районында балалар библиотекалары тик урта һәм ете йыллыҡ мәктәптәр эргәһендә генә бар ине. Китаптар фонды уларҙа ла бик аҙ ине. Быйылғы уҡыу йылында район Советы исполкомы һәм район мәғариф бүлеге урта һәм ете йыллыҡ мәктәптәр эргәһендәге библиотекаларҙың китап фондын арттырырға һәм бөтә башланғыс мәктәптәрҙә уҡыусы балалар библиотекалары асырға, тигән бурыс ҡуйғайнылар. Мәктәптәрҙең талабын үтәү өсөн район мәғариф бүлеге 20 мең һумлыҡ китаптар алып, мәктәптәргә таратты.

Хәҙер райондағы 4 урта, 16 ете йыллыҡ мәктәптәр эргәһендәге уҡыусы балалар библиотекаларының китап фонды арттырылды һәм 40 башланғыс мәктәптә яңы библиотекалар асылды. Балалар библиотекаларға ҙур ҡыҙыҡһыныу менән йөрөйҙәр.

С. Макарский.

Баҡсасылыҡтан ҙур доход алыу өсөн

Матрар районы Киров исемендәге колхозында 20 гектар майҙанлы емеш баҡсаһы бар. Баҡсасылыҡ бригадаһы унда алма ағасы, крыжовник, ҡарағат, ҡурай еләге һәм башҡа төрлө емешеләктәр ултыртҡайны.

Хәҙер баҡсала ҡыҙыу эш башланды. Ҡышҡы һыуыҡтарға бирешмәй сыҡҡан алма ағастарын тәрбиәләү, баҡсаны таҙартыу, уға культураны тәң бирерү өсөн бригада ағзалары тырышып эшләйҙәр.

Колхоз баҡсаһы быға тиклем дә йыл һайын мул доход биреп килде. Бригадир иптәш Камалов Әкрәмдең был эштә инде ун өс йыллыҡ тәжрибәһе бар. Ул районда үткәрелгән алдынғы колхозсылар кәңәшмәһендә баҡсаны тағы ла киңәйтергә, унда виноград үстерергә, быйыл баҡсанан, кәм тигәндә, 40 мең һум доход алырға һүҙ биргәйне. Хәҙер бригада үҙенең был вәғәҙәһен үтәү өсөн тырыша.

Тирәк, саған, акация менән уратып алынған был матур баҡса колхозсыларҙың ҙур доход сығанағы булып тора.

Колхоздың йәшелсә баҡсаһы ла күрше колхоздарға өлгө булырлыҡ. Уға коммунист иптәш Ғиләфинов етәкселек итә. Ул үҙенең эшен айырыуса һөйөп башҡара. Шуға күрә лә был бригаданың кәбестә, помидор рассадалары күптән шытып сыҡҡан.

Колхоздың производство планы буйынса йәшелсә баҡсаһы 42 мең һум доход бирергә тейеш. Йәшелсәселәр бригадаһы ағзалары уны арттырып үтәргә һүҙ бирҙеләр.

Х. Мостафин.

Ауыл лекторийе

Өфө районы Шаҡша ауыл Советы эргәһендә ауыл лекторийе ойошторолғайны. Ул үҙенең эшен планлы алып бара. Уның составында уҡытыусылар, агрономдар, медицина работниктарынан 13 лектор бар.

Территориаль партия ойошмаһы лекторийға бөтә яҡлап ярҙам күрһәтә, лекторҙарҙы кәрәкле әҙәбиәт менән тәьмин итә, лекцияларҙың тексын тикшереүҙе ойоштора.

Лекторий политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса ҙур эш башҡара. 1950 йылдан башлап лекторҙар тарафынан 61 темаға лекция, доклад уҡылды. Политик һәм фәнни белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының ағзаһы, Шаҡша урта мәктәбе директоры иптәш Я. В. Герасимов философия һәм ВКП(б) тарихы буйынса 5 лекция, коммунистик тәрбиә тураһында 2 лекция уҡыны. Оҡолова һәм иптәш Иванова 13-сө лекция уҡынылар.

М. Баранов,
ВКП(б)-ның Өфө райкомы пропагандисы.

Ғилми конференциялар

Өфөләге Тимирязев исемендәге башҡорт дәүләт педагогия институтының бөтә факультеттарында ла 15 апрелдә ғилми конференциялар булып үтте.

Тарих факультеты студенттары Сталин стипендиаты Закиров һәм уҡыу отличнигы Н. Биикбулатов иптәштәр «Берлинская ... Ойошмаһы», «Тыныслыҡты һаҡлау өсөн прогрессив халыҡтарҙың көрәше» тигән темаларға бәйләнешле докладтар яһанылар.

Шулай уҡ биология, география, психология, педагогика, тел-әҙәбиәт факультеттарында ла конференциялар ҙур ойошҡанлыҡ һәм йәнле фекер алышыуҙар менән үтте.

Р. Сыртланов.

Өфө ҡалаһының 45-се номерлы ҡыҙҙар урта мәктәбе уҡыусылары яҙғы каникулдарҙан һуң тағы ла ҙурыраҡ дәрт менән уҡыу эшен башланылар һәм ҙур тырышлыҡ менән экзамендарға әҙерләнәләр.

Һүрәттә (уңда): уҡытыусы Е. И. Маркина етенсе класта химиянан дәрес үткәрә. А. Червинский фотоһы.

Малсылыҡ алдынғылары

Ҡыйғы районының күп кенә колхоздары общественный малсылыҡты үстереүҙә өс йыллыҡ планын үтәүҙә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Айырыуса йәш малдарҙы тәрбиәләүҙә малсылыҡ работниктарының хеҙмәттәре ҙур.

Ленин исемендәге колхозда йылҡысылыҡты үстереүгә ҙур иғтибар бирелә. Иптәш Шакиров 1950 йылда үҙе тәрбиәләгән 31 бейәнән 31 ҡолон алып үҫтерҙе. Был уңыштарға ул бейәләрҙе ҙур хәстәрлек һәм иғтибар менән тәрбиәләү, дөрөҫ ашатыу, эсереү һөҙөмтәһендә өлгәште. Иптәш Шакиров йылҡысылыҡты үстереү өлкәһендә яҡшы эш күрһәткестәре өсөн 1949 йылда Почет билдәһе ордене менән награҙланғайны. Хәҙер ул Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә кандидат булып тора.

«Политотдел» колхозының данлыҡлы сабаны иптәш Козлов йыш бәрәсләтеү методын ҡулланып эшләй. Ул үҙе тәрбиәләгән 100 һарыҡтан 187 бәрәс алып үҫтерҙе. 1950 йылда һарыҡтарҙан йөн ҡырҡып алыу планын да арттырып үтәне. Намыҫлы һәм фидаҡәр хеҙмәте өсөн иптәш Козлов хеҙмәт көнөнә өҫтәмә түләү тәртибендә 37 һарыҡ һәм 11 килограмм йөн алды.

Шулай уҡ «Память Ильича» һәм Фрунзе исемендәге колхоздарҙың сабандары ла йыш бәрәсләтеү методын ҡулланып, йәш малдар алыу планын арттырып үтәүгә өлгәштеләр.

«Коминтерн» колхозының сусҡа ҡараусыһы иптәш Идиятова үҙ эшен һөйөп һәм намыҫ менән башҡара. Ул Социалистик Хеҙмәт Геройы, сусҡа ҡараусы Люскованың тәжрибәләрен ҡулланып эшләй. Иптәш Идиятова 1951 йылда һәр бер сусҡанан 25 сусҡа балаһы алыу өсөн көрәшә.

«Показатель» колхозында комсомолка Мария Брагина һыйыр һауыу эшен яҡшы үҙләштерҙе. Ул 1950 йылда үҙе тәрбиәләгән һәр бер һыйырҙан 1788 литр һөт һауып алды. Иптәш Брагина 1951 йылда һәр бер һыйырҙан 2500 литр һөт һауып алырға һүҙ бирҙе.

В. Кондров.

Ауыл хәбәрселәре һәм уҡыу йорто мөдирҙәренең кәңәшмәһе

Шаран. Ошо көндәрҙә район газетаһы редакцияһының инициативаһы менән ауыл хәбәрселәре һәм уҡыу йорто мөдирҙәренең кәңәшмәһе үткәрелде. Бында байтаҡ ҡына стена газеталарының эстәлеге һәм оформлениеһе тикшерелде. Унан һуң стена газеталары редакторҙары үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән уртаҡлаштылар. Кәңәшмә Чапаев исемендәге колхоз правленияһе эргәһендә сығарылған «Победа» стена газетаһының яҡшы ойошторолоуын билдәләп үтте.

Кәңәшмәлә районның «Сталинсе» газетаһы редакторы иптәш Ноғманов «Яҙғы сәсеү осоронда стена газеталарының бурыстары» тигән темаға доклад менән сығыш яһаны. ВКП(б) Өлкә Комитеты вәкиле иптәш Федоров халыҡ-ара хәлдәр тураһында лекция һөйләне.

И. Абдуллин.

Профсоюз активе семинарҙары

МТС һәм ер органдары работниктары профсоюзының Башҡортостан Өлкә Комитеты ВЦСПС программаһы буйынса профсоюз активе өсөн йыл һайын семинар үткәрә.

Быйыл апрель айында үткәрелгән семинарҙа профсоюздың түбән ойошмаларынан 45 кеше ҡатнашты. Семинарҙа ҡатнашыусылар профсоюз ойошмаларына етәкселек итеү эшен өйрәнделәр.

Май һәм июнь айҙарында тағы ла шундай уҡ семинарҙар үткәреләсәк.

С. Маликов.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

✱ Кушнаренко. Райпотребсоюз эргәһендә комсомол ойошмаһының инициативаһы менән ҡыҙыл мөйеш ойошторолдо. Ул яҡшы йыһазландырылды һәм портреттар, плакаттар, лозунгылар менән биҙәлде.

Ҡыҙыл мөйештә библиотека һәм шулай уҡ баян, патефон, шахмат һәм башҡа уйын ҡоралдары бар. Бистәрен унда райпотребсоюз һәм сельпо работниктары культуралы ял итәләр.

Н. Гэрәев.

✱ Ҡыйғы МТС-ы трактористар әҙерләү өсөн өс айлыҡ курс үткәрҙе. Унда бөтәһе 28 кеше уҡыны.

Курсанттар уҡыуҙы уңышлы тамамлап, трактор йөрөтөргә аттестат алдылар.

Немец халҡы Эрнст Тельман иҫтәлеген хөрмәтләй

БЕРЛИН, 15 апрель. (ТАСС). 15 апрелдә Берлинда немец эшселәр синыфының 1944 йылда гитлерселәр тарафынан йыртҡыстарса үлтерелгән юлбашсыһы Эрнст Тельмандың тыуыуына 65 йыл тулыу айҡанлы Германия берҙәм социалистик партияһының Үҙәк комитеты һәм Берлин ойошмаһының етәкселеге тарафынан ойошторолған йыйылыш булып үткән.

Ҡыҙыл һәм ҡара-ҡыҙыл-алтын байраҡтар менән байрамса биҙәлгән сәхнәлә Тельмандың ҙур портреты аҫтына: «Эрнст Тельман юлы буйынса яңы типтағы партияны төҙөү өсөн алға!», «Эрнст Тельман васыяттарын үтәп, ремилитаризациялауға ҡаршы һәм тыныслыҡ өсөн көрәштә эшселәр синыфы хәрәкәттәренең берҙәмлеген нығытығыҙ!» тигән лозунгылар яҙылған.

Йыйылыш президиумында — СЕПГ председателе Вильгельм Пик, Эрнст Тельмандың ҡатыны — Роза Тельман, СЕПГ политбюроһының ағзалары.

Йыйылышта шулай уҡ Совет дипломатик миссияһының етәксеһе Г. М. Пушкин һәм халыҡ демократияһы илдәре дипломатик миссияларының вәкилдәре ҡатнашты.

СЕПГ-ның генеральный секретары Вальтер Ульбрихт Эрнст Тельмандың тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында, эшселәр синыфының берҙәмлеге, тыныслыҡ өсөн уның көрәше тураһында доклад менән сығыш яһаған. Ульбрихт Германияның бөтә хеҙмәтсәндәрен, Тельман иҫтәлеген хөрмәтләп, Көнбайыш Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы, тыныслыҡ һәм берҙәм демократик һәм тыныслыҡ һөйөүсе Германияны төҙөү өсөн көрәштә эшселәр синыфы хәрәкәттәренең берҙәмлеген нығытырға саҡырған.

Франциала тыныслыҡты яҡлаусылар Тыныслыҡ Пактын төҙөүҙе талап итәләр

ПАРИЖ, 14 апрель. (ТАСС). Францияның тыныслыҡты яҡлаусылары биш бөйөк державаның Тыныслыҡ Пактын төҙөүҙәрен талап итәләр. «Юманите» газетаһы, тыныслыҡты яҡлаусыларҙың Бенежак ҡалаһында үткәрелгән йыйылышында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советының беренсе сессияһының ҡарарҙарын йәнле тикшереүҙән һуң, биш бөйөк держава араһында һис кисекмәҫтән Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында бер тауыштан талап ҡабул ителгән, тип хәбәр итә.

Тыныслыҡты яҡлаусыларҙың Орадур-Сюр-Гланда (Үрге Вьенна департаменты) буласаҡ кантональ конференцияһына әҙерләнеү айҡанлы Сен-Брик ҡалаһында тыныслыҡты яҡлаусыларҙың йыйылышы булған. Унда Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы сессияһының ҡарарҙары тикшерелгән. Йыйналыусылар Тыныслыҡ Пактын төҙөү кәрәклеге тураһында белдергәндәр. Йыйылышта тыныслыҡты яҡлаусыларҙың кантональ конференцияһына делегаттар һайланған.

АҠШ прогрессив партияһы Милли комитетенең белдереүе

НЬЮ-ЙОРК, 14 апрель. (ТАСС). АҠШ прогрессив партияһы Милли комитетенең председателе Бенсон һәм секретары Болдуин, «прогрессив партияның Милли комитеты 14—15 апрелдә Чикагола тыныслыҡ өсөн көрәшкә көстәрҙе мобилизациялауға арналған махсус сессияға йыйналасаҡ», тип белдергәндәр.

«Беҙҙең тарихыбыҙ өсөн был киҫкен моментта, — тип әйтелә белдереүҙә, — прогрессив партияның Милли комитеты Америка халҡының көстәрен нығытыу өсөн һәм халыҡты һуғышҡа ылыҡтырырға һәм Америка халҡын өйләшмәҫкә мәжбүр итергә теләүсе бөтә кешеләргә яуап бирерү маҡсатын тотҡан курсты билдәләү өсөн йыйналасаҡ. Милли комитет тыныслыҡҡа, граждандыҡ хоҡуҡтарына һәм сәскә атыуға ынтылыусы бөтә группалар менән союзда 1952 йылғы һайлауҙарға әҙерләнеү өсөн курс билдәләйәсәк».

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 14 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 14 апрелдә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының кәңәшмәһендә Франция вәкиле Пароди иртәнге аш ойошторған. Унда СССР делегацияһының етәксеһе Громыко, АҠШ делегацияһының етәксеһе Джессеп һәм Великобритания делегацияһының етәксеһе Дэвис, шулай уҡ уларҙың урынбаҫарҙары ҡатнашҡан. Иртәнге ашта кәңәшмәлә ҡатнашыусылар араһында фекерҙәр менән официаль булмаған алмашыуҙар үткәрелгән, был айҡанлы министрҙәр урынбаҫарҙарының 14 апрелгә билдәләнелгән ултырышы кисектерелгән.

Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Албанияла ҡултамғалары йыйыу

ТИРАНА, 14 апрель. (ТАСС). Албания телеграф агентствоһы, Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Албанияла ҡултамғалары йыйнау ҙур уңыш менән дауам итә, тип хәбәр итә. Албания халҡы Мөрәжәғәткә ҡултамғалары йыйнау буйынса кампанияла актив ҡатнашыуы менән тыныслыҡ өсөн көрәшергә үҙенең ҡаҡшамаҫ ихтыярын белдерә. Тыныслыҡты яҡлауҙың бөтә Албания комитетының тулы булмаған мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ҡултамғалары йыйнай башлағандан алып үткән ике көн эсендә Мөрәжәғәткә бөтә илдә 380 мең кеше ҡул ҡуйған. Тик бер Тирана районында һәм ҡалаһында ғына ике көн эсендә 60 меңдән артығыраҡ ҡултамғаһы йыйналған.

Ҡултамғалары йыйнау дауам итә.

Бевиндең үлеүе

ЛОНДОН, 14 апрель. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 14 апрелдә кис Англияның элекке сит ил эштәре министры Эрнест Бевин үлгән.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 15 апрель. (ТАСС). [...] халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһының 15 ап[...] таштырылған белдереүендә, фронттың [...] һәм көнсығыш участкаларында Халыҡ армияһының частары һөжүм айырыусы дошманға ҡаршы ҡаты [...] алып барыуҙы дауам иттерҙеләр, тип [...] телә. Һуғыш барышында Халыҡ армияһының частары дошман тарафынан [...] атакаларҙы кире ҡаҡтылар һәм уға [...] ле көстә һәм техникала ҙур юғалтыу [...] терҙеләр.

Фронттың көнбайыш участкаһында [...] кән тәүлектә айырым үҙгәрештәр булма[...].

14 апрелдә фронттың көнбайыш [...] ҡаһында Халыҡ армияһының частары [...] мандың 3 самолетын атып төшөрҙеләр.

ФӘННИ РАБОТНИКТӘР БӨТӘ ДОНЪЯ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ ПРАГАЛАҒЫ СЕССИЯҺЫНДА

ПРАГА, 13 апрель (ТАСС). Прагала [...] апрелдә фәнни работниктарҙың [...] Донъя федерацияһының икенсе сес[...] һының параллель ултырышы т[...] ланды. Сессия эшендә Германия [...] мократик Республикаһы фәнни работ[...] тәренең делегацияһы ла ҡатнашты. [...] федерация тарафынан 12 апрелдә ту[...] ған белдереүгә тулыһынса ҡушылды.

Ултырышта ҡатнашыусылар фәнни [...] ботниктарҙың халыҡ-ара конгресын [...] рырға ҡарар ҡабул иттеләр. [...] тар бындай конгресте саҡырыу [...] лә илдәрҙең фәнни работниктары араһында бәйләнеште нығытыуға, фә[...] ни тикшеренеүҙәр өлкәһендә тәжри[...] ләр менән уртаҡлашырға б[...] лыҡ итәсәк, тип ышаныс белдерҙе. Конгресс халыҡ-ара проблемаларҙы [...] юл менән хәл итеү, шулай уҡ [...] бактериология ҡоралын агрессив һуғыш[...] файҙаланыуға ҡаршы көрәш эшендә [...] донъя фәнни работниктарының бурыстарын билдәләйәсәк.

Ошондай конгресте саҡырыу [...] һәм ваҡыты тураһындағы мәсьәләне фәнни работниктарҙың Бөтә Донъя федерацияһының башҡарма комитеты хәл итәсәк.

ФИАПП секретариатының ҡарары

ВАРШАВА, 15 апрель. (ТАСС). [...] политик тотҡондарҙың Халыҡ-ара федерацияһы (ФИАПП) секретариаты [...] литик тотҡондарҙың, ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың һәм партизандарҙың ошо йылдың 30 июнендә [...] нала халыҡ-ара съезын саҡырырға [...] итте.

Секретариат ФИАПП-ка инеүсе [...] ойошмаларҙы тыныслыҡ өсөн, фашизмды кайтанан тыуҙырыуға ҡаршы [...] элекке политик тотҡондарҙың, [...] ват ителеүселәрҙең, партизандарҙың һәм ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың берҙәмлеге лозунгыһы [...] тында съезға киң әҙерлек кампанияһы йәйелдерергә саҡыра.

АҠШ коммунистар партияһының мөрәжәғәте

НЬЮ-ЙОРК, 15 апрель. (ТАСС). «Дейли Уоркер» газетаһы компартия ағзаларына, тыныслыҡ һәм демократия өсөн көрәшеүсе бөтә кешеләргә АҠШ коммунистар партияһының мөрәжәғәтен иғлан иткән. Мөрәжәғәт Маккарандең реакцион законына ҡаршы көрәш өсөн билдәләнелгән компартия фондына, шулай уҡ «Дейли Уоркер» газетаһын финанс яғынан яҡлау өсөн билдәләнелгән фондҡа иғәнәләр индерергә саҡыра.

АҠШ-тың ХӘРБИ ӘҘЕРЛЕКТӘРЕ

АҠШ-тың вәкилдәр палатаһында

ВАШИНГТОН, 14 апрель. (ТАСС). [...] апрелдә АҠШ-тың вәкилдәр палатаһы [...] би повинность тураһында хәҙерге ваҡытта йәшәгән закон хәрәкәтен тағы ла [...] йылға оҙайтыуҙы, хәрби хеҙмәткә 18 [...] ярымға тиклемге йәштәге кешеләрҙе [...] ҡырыуҙы һәм бөтә һалдаттарҙың да, [...] иҫәптән ҡораллы көстәр составына саҡырылған бөтә кешеләрҙең дә 26 ай хеҙмәт итәсәктәрен урынлаштырыуҙы күҙ [...] тотоусы закон проектын 44 тауышҡа [...] шы 372 тауыш менән хупланған.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

ЯҘ АҒАС УЛТЫРТЫУ ҺӘМ ТӘРБИӘЛӘҮ

Баҫыу һаҡлаусы урман полосалары бары тик ҡый үләндәренән таҙартылған ҡара һәм иртә пар ерҙәренә, шулай уҡ түңгә тәрән итеп һөрөлгән майҙандарға ғына ултыртылырға тейеш. Быйыл күп кенә колхоздарҙа бына бындай алдан махсус әҙерләнгән ерҙәрҙең етешмәүе айҡанлы, баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын ябай рәүештә түңгә һөрөлгән дөйөм майҙандарҙа ултыртырға тура килә. Шуға күрә ағас ултыртылырға тейеш булған был участкаларҙа кәҫте әйләндермәйенсә генә яңынан 27 — 30 сантиметрға тиклем тәрәнәйтеп эшкәртергә кәрәк. Бының өсөн трактор һабандарының кәҫ тотҡаһы алып ташлана. Дым һаҡлау һәм һаҡлау маҡсатында ағас ултыртыу һәм ағас орлоҡтары сәсеү өсөн билдәләнгән бөтә участкаларҙа, шулай уҡ элек ултыртылған урындарҙа ла ерҙе 1-2 эҙҙән тырматырға, ә ағас ултыртыуҙан алда тырматыу менән бер үк ваҡытта культивация үткәрергә кәрәк.

Яңы ултыртылған ағастарҙың үҫешләнеүе ултыртыу материалдарының сифатына нығ бәйләнгән. Ултыртыу өсөн бары тик стандарт һәм зарарланмаған үсентеләр генә файҙаланылырға тейеш. Шулай уҡ баҫыу һаҡлаусы урман полосаһындағы ағастарҙың ҡойолған орлоҡтарынан үҫкән йәш ағастарҙы ултыртыу материалы итеп файҙаланырға мөмкин. Питомниктарҙағы үсентеләрҙе, урмандарҙа үҫкән йәш ағастарҙы иртә яҙ бик ҡыҫҡа срок эсендә ҡаҙып алырға кәрәк. Үсентеләр 25 — 27 сантиметр тәрәнлектә бик һаҡлыҡ менән ҡаҙылып алына. Бында ағас тамырҙарының өҙөлөүенә юл ҡуйырға ярамай. Ҡаҙылып алынған үсентеләр шунда уҡ һайлана, сорттарға айырыла һәм бергә йыйналып, тамыры ваҡытлы рәүештә тупраҡ менән күмелә. Ағас үсентеләрен ҡаҙып алғанда, ташығанда һәм ултыртҡанда тамырҙарҙың елләп кибеүенә юл ҡуйырға ярамай. Быға юл ҡуйғанда үсентеләрҙең бөтөнләй үҫешләнмәүе һәм ултыртылған ағастарҙың ҡороп һәлак булыуы бар.

Сыбыҡтарҙы һәм сыбыҡсаларҙы ултыртыуҙан бер тәүлек элек кенә ҡырҡырға һәм улар тәүлек буйына һыуҙа торорға тейештәр.

Питомниктарҙан алынған ултыртыу материалдары етешмәгәндә, был маҡсатта яҡшы тамырланып үҫкән 1 — 3 йыллыҡ ҡырағай ағастарҙы файҙаланырға ярай.

Урман полосаларын ултыртыуҙы бары тик иртә яҙ үткәргәндә генә тейешле эффект биреүе мөмкин. Ул баҫыу эштәренең тәүге көндәрендә үк башланып, 5 — 7 көн эсендә тулыһынса тамамланырға тейеш. Ултыртыу материалдарының ултыртыу алдынан да һәм, шулай уҡ, ултыртыу ваҡытында ла нығ дымлы булыуы шарт. Ултыртҡан ваҡытта зарарланған, насар сифатлы материалдар алып ташланырға тейеш. Шулай уҡ 2-3 йыллыҡ үсентеләрҙең, оҙонлоғо 10 сантиметр ҡалдырылып, остары ҡырҡып ташлана. Был, яҡшы үҫешләнеүгә ярҙам итә.

Ағастарҙы ултыртҡанда рәт араларының нығ һаҡланыуына һәм рәттәрҙең тура булыуына нығ иғтибар бирергә кәрәк. Был баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын тәрбиәләү өсөн бик мөһим. Бының өсөн ағасты ҡул менән ултыртҡанда, участкаға маркировка (рәттәрҙе һыҙып билдәләү) үткәрелә, ә машина менән ултыртҡанда бары тик тәүге рәт кенә сыбыҡтар менән билдәләнә. Машина артынан шунда уҡ ултыртылған үсентеләр ентекләп тәҙәтелә бара, һай итеп ултыртылған үсентеләр ҡайтанан ултыртыла. Ултыртылмай ҡалған урындарға көрәк менән соҡор ҡаҙылып яңынан ултыртыла. Әгәр ҙә тупраҡ йомшаҡ баҫылған булһа, үсентеләр тирәләй уны тапап сығырға кәрәк. Үсентенең төбө (йәғни элек үсеп ултырған сағта тупраҡҡа тейеп торған урыны) ултыртыу ваҡытында ер өҫтөнән 4-5 сантиметрға түбән күмдерелә. Сыбыҡсалар ҙа тәрәнгә күмдерелә. Ултыртылғандан һуң, уларҙың тик остары ғына тупраҡ өҫтөнән ҡалҡып торорға тейеш. Үсентеләрҙең тамырын тупраҡтың тулы тәрәнлегенә төшерергә, тамырҙарҙы бөкләндермәҫкә, кәкрәйтмәҫкә һәм тупраҡҡа нығ аралаштырып, тығыҙ итеп күмдерергә кәрәк.

Урман полосаларында рәттәрҙең аралыҡтары 1,5 метр, ә рәттәрҙә ағастарҙың аралығы 60 сантиметр булырға тейеш. Урман полосаларының һәр ике яғында берәр метр киңлектә асыҡ урындар ҡалдырыла һәм ул йәй буйына ҡара пар хәлендә тотола. Ағас һәм ҡыуаҡ тоҡомдарын аралаштырыу схемаһын һәм үсентеләр ултыртыу нормаһын һаҡлауға нығ иғтибар бирергә кәрәк.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын ултыртыуға академик Т. Д. Лысенко методы буйынса имән сәтләүегән ояламп сәсеү төп урынды тота. Колхоздарҙа булған һәм әҙерләү ойошмаларынан алынған, шулай уҡ яҙ әҙерләнгән бөтә имән сәтләүектәре бары тик оялап сәсеү өсөн генә файҙаланылырға тейеш.

Имән сәтләүегенең дымлы тупраҡҡа, мөмкин тиклем иртә сроктарҙа, 5 — 7 сантиметр тәрәнлегендә сәселеүе шарт.

Уҙған йыл имәнде оялап сәскән урындарҙа күҙ кенә рәт аралары һөрөлмәгән булһа, унда быйыл яҙ рәт араларын һөрөргә һәм пропаш культуралар сәсергә кәрәк. Был майҙандарҙа быйыл аҙ ярҙамсы ағастарҙың орлоҡтары сәселергә тейеш. Ә уҙған йыл оялап сәселгән майҙандарҙа күҙ кенә рәт аралары һөрөлөп тә, ярҙамсы ағас тоҡомо орлоҡтары сәселмәй ҡалған булһа, унда быйыл яҙ, иртә культуралар сәсеү менән бер үк ваҡытта, бындай ағастарҙың орлоҡтары сәселергә, йәки, тейешле тоҡомдарҙың үсентеләре ултыртылырға тейеш. 1950 йылда сәселгән майҙанда сыҡмай ҡалған оялар булһа, уларға быйыл яҙ еңелсә шытҡан имән сәтләүектәре ултыртыла. Бында уларҙың һәр береһендә 5-6 дана имән сәтләүеге булдырыу иҫәбенән эш ителә. Тулыландырыуҙы шулай уҡ һәр бер ояла кәмендә 10-ар дана имән үсентеһе булдырыу иҫәбенән дә тулыландырырға мөмкин. Әгәр ҙә оя тулыһынса юҡҡа сыҡҡан булһа, уны имән үсентеһе ултыртыу менән генә түгел, шулай уҡ йыла йәки алма ағастары үсентеләре ултыртыу менән дә тулыландырыла. Бында оялап ултыртылған ағастарҙың бер үк тоҡомдан булыуы күҙәтелә.

Ағас үсентеләре ултыртылып үстерелгән урман полосаларында һирәкләнеү ваҡиғалары булһа, улар тулыландырыла. Әгәр ҙә былтыр яҙ ултыртылған һәр бер гектар майҙанда 90 проценттән кәм, ә 1949 йылда ултыртылған майҙанда 85 проценттән кәм һәм 1948 йылда ултыртылған майҙанда 80 проценттән кәм үҫешләнһә, полоса өҫтәп яңы үсентеләр ултыртыу менән тулыландырыла. Норма буйынса һәр бер гектар майҙанда 8 — 10 мең ағас үсентеһе булырға тейеш. Өҫтәп ағас ултыртҡанда 25-әр сантиметр ҙурлыҡта өс мөйөшләп соҡор яһала. Шулай итеп, һирәкләнгән урындар быйыл мотлаҡ тулыландырылырға һәм аяҡҡа баҫтырылырға тейеш. Был эш яңы урман полосалары ултыртыу менән бер үк ваҡытта башҡарыла.

Ағас үсентеләрен яҙ тәүге тәрбиәләү мөһим урын тота. Бында тупраҡ дымын һаҡлау, ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш саралары үткәрелә һәм ошо һөҙөмтәлә ағастарҙың нормаль үҫеүҙәре тәьмин ителә. Баҫыуҙарҙа иртә культураларҙы сәсеү сроктары ваҡытында урман полосаларында былтырғы ҡыйҙар таҙартылырға, рәт аралары тәрән итеп культивацияланырға, полосаның ике яғындағы асыҡ урындар һөрөлөргә тейеш. Яҙғы сәсеү осоронда шулай уҡ быйыл күҙ һәм 1952 йылдың яҙында ағас ултыртыу өсөн билдәләнгән участкаларҙағы ерҙәр тәрән итеп һөрөләләр.

Агроном А. Тайчинов.

Редактор F. F. ҒАФАРОВ.

И. В. Сталиндең

Башҡорт теленә тәржемә ителгән 16 томлыҡ әҫәрҙәренә

Книготорг магазиндәре һәм „Союзпечать"

бүлектәре тарафынан подписка ҡабул ителә.

Беренсе том 1951 йылдың апрель айында баҫылып сығасаҡ.

Башкорт АССР-ының Книготоргы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

ПО 2425 Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл
№ 76 (8793)
18
АПРЕЛЬ
шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ 1951 ЙЫЛ 16 АПРЕЛДӘГЕ УЛТЫРЫШТАРЫ ТУРАҺЫНДА ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ (1-се бит).

СССР-ҙың 1946 — 1950 ЙЫЛДАРҒА ДҮРТЕНСЕ (ҺУҒЫШТАН ҺУҢҒЫ БЕРЕНСЕ) БИШ ЙЫЛЛЫҠ ПЛАНЫ ҮТӘЛЕШЕ ЙОМҒАҠТАРЫ ТУРАҺЫНДА СССР ГОСУДАРСТВО ПЛАН КОМИТЕТЕНЕҢ ҺӘМ СССР ҮҘӘК СТАТИСТИКА УПРАВЛЕНИЕҺЕНЕҢ БЕЛДЕРЕҮЕ (1—2-се биттәр).

ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ. Жан Локман. — Башҡортостан нефтселәре тураһында тәүге роман (3-сө бит).

И. Кудаяров. — Колхозда производство бригадаһы (3-сө бит).

Ғ. Алтай. — Лекцияларҙың сифатын яҡшыртайыҡ! (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. В. Коврижных. — Сабынлыҡтар һәм көтөүлектәрҙең урожайлылығын күтәрәйек! (4-се бит).

Е. Заруди. — Семья һәм мәктәп (4-се бит).

С. Вахитов. — Район һәм ауыл библиотекаларында иғтибар көсәйтелһен (4-се бит).

С. Иминева. — Күк һағыҙ үҫтереү (4-се бит).

Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Тимер юл транспортының аныҡ эшләүе өсөн

Совет тимер юлсылары коммунистәр партияһы етәкселегендә халыҡ хужалығының башҡа патриоттары кеүек үк, илебеҙ коммунизм төҙөү эшенә яңынан-яңы өлөш индерәләр. Большевиктәр партияһы һәм Совет хөкүмәте тимер юл транспортын артабан үҫтереүгә айырыуса әһәмиәт бирә. Улар транспорттың эшен яҡшыртыуға, уны яңы техника менән байыҡтырыуға өҙлөкһөҙ хәстәрлек күрәләр. Юлбашсыбыҙ иптәш Сталин ВКП(б)-ның XVII съезында тимер юл транспортының әһәмиәтенә туҡталып: «Транспортты ныҡлы яҡшыртыу нәүбәттәге һәм бик актуаль бурыс булып тора, был бурысты хәл итмәй тороп, беҙҙең алға барыуыбыҙ мөмкин түгел», тигәйне.

Тимер юлсылар бөйөк юлбашсының был күрһәтмәһен боевой программа итеп ҡабул иттеләр. Улар бөтә көстәрен, энергияларын һәм һәләтлелектәрен тимер юл транспортының аныҡ эшләүенә арнайҙар. Сөнки уның аныҡ эшләүе илебеҙҙең иҡтисади ҡеүәтенең нығыуы, артабан алға атлауы һәм коммунизм төҙөү эше менән ныҡ бәйләнгән.

Өфө магистрале коллективы, заданиеләрҙе срогынан алда үтәү өсөн Куйбышев тимер юлы работниктәре менән социалистик ярышҡа сығып, ҙур уңыштарға өлгәште. Ул бөтә донъяла тыныслыҡ эшен нығытыу, илебеҙҙең ҡеүәтен артабан күтәреү өсөн эске резервтарҙа киң файҙалана, республикала тимер юл транспортын артабан үҫтерә. Бөтә предприятиеләрҙә лә партия ойошмалары етәкселегендә һәм коммунистарҙың актив ҡатнашлығында юлды юғары сифатлы итеп тотоу, маршрутты формировать итеү, йөк тейәү һәм бушатыу операцияларын тиҙ башҡарыу, йөк ташыуҙың үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн эшлекле саралар күрә.

Башҡортостан — ҡеүәтле индустриаль республикаға әйләнә бара. Шуның менән промышленность продукция етештереү күләме лә үҫә бара. Был йөк йөрөтөү тиҙлеген арттырыуҙы, уның юғары сифатлы итеп һәм юғалтыуһыҙ башҡарылыуын талап итә. Шуға күрә, Өфө тимер юлы коллективы, үткән йылдан бирле тыныслыҡ вахтаһында эшләп, коммунизм төҙөлөштәренә йөк ташыу темпын әленән-әле үҫтерә. Өфө станцияһының техник осмотр пункты мастере иптәш Семенов смена һы поездарҙың 60 процентына осмотрҙы тиҙләтелгән метод менән башҡара. Һөҙөмтәлә поездарҙың станцияла тотҡарланып тороуҙары 10 — 15 минутҡа ҡыҫҡартылды. Вагондар депоһында иптәш Максимов етәкселек иткән слесарҙар бригадаһы һәр бер ремонтланған вагонға гарантия таныҡлығы бирә.

Локомотивтарҙы һәм тимер юл хужалығы оборудованиеларын социалистик һаҡлыҡҡа алыу, уларҙың ремонт-ара эшләү срогын оҙайтыу өсөн көрәш — ул республикабыҙ тимер юлсыларының мөһим эш формаларының береһе. Магистралдең машинистәре бик күп паровоздарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алдылар. Уфа депоһының машинисы иптәш Евстигнеев, үҙ паровозын социалистик һаҡлыҡҡа алып, уның ремонт-ара йөрөшөн 40 мең километрға арттырҙы. Бындай машинистәр, ремонтсылар, тиҙләтелгән метод менән эшләүселәр, обходчиктәр, кондукторҙар һәм техниктар Өфө тимер юлы предприятиеләрендә күп. Улар социалистик илебеҙҙең бәхетле киләсәге өсөн эшләйҙәр.

Уңыштар ҙур. Ләкин иҫәк кенә уңыштар ҙур булмаһын Өфө магистраленең ҡайһы бер предприятиеләре Тыуған илебеҙ талап иткәнсә эшләмәйҙәр, үҫә барған [illegible]

[illegible] 1951 йылдың беренсе кварталында [illegible]

станцияһында айырыуса асыҡ күренә. Унда партия-политик эш насар ҡуйылған. Алдынғы эш методтары индерелмәй. Ике йыл инде бында биш йөҙсөләр хәрәкәтен киңәйтеү тураһында һөйләйҙәр, ләкин ҡәнәғәтләнерлек эш күренгәне юҡ. Партия ойошмаһы быға әһәмиәт бирмәй. Унда социалистик путевка менән йөрөүсе машинист Креков кеүек стахановсылар күп. Бындай машинистәргә бөтә ерҙә лә «йәшел урам» булырға тейеш. Ләкин уларға магистралдең станцияларында юл бирелмәй. Машинистәргә биш йөҙсө булып үҫергә мөмкинселек, хәстәрлек юҡ. Өфө тимер юлы начальнигы иптәш Козенко магистралдә бөтә машинистарҙың 50 проценты биш йөҙсөләр хәрәкәте менән солғанып алыныуы тураһында хәбәр итә. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә был хәрәкәттең һөҙөмтәһе күренгәне юҡ. Республикала биш йөҙсөләр тик бармаҡ менән генә һанарлыҡ, бик аҙ. Черниковск-II станцияһы начальнигы иптәш Лазарев хатта үҙенә буйһонған етәксе работниктәргә ярҙам күрһәтеү һәм уларға күрһәтмәләр биреүҙе лә тейешле һанамай. Һөҙөмтәлә тейәү, бушатыу эшендә йыш ҡына тотҡарлыҡтар яһала. Нефть эшкәртеү заводы һәм тимер юл работниктәре араһында хеҙмәттәшлек юҡ. Бындай эш стиле, әлбиттә, оҙаҡ ваҡытты алыуға һәм ярыулыҡҡа күп зыян килтерә. Вагондар йөк менән оҙаҡ ултыралар. Партия һәм профсоюз ойошмалары етәкселәре коллективты фиҙакәр хеҙмәткә ойошторммайҙар, уға эшлекле ярҙам күрһәтмәйҙәр.

Бындай сериоз етешһеҙлектәр магистралдең башҡа станцияларында һәм участкаларында ла бар әле. Уларҙың бәтәһен дә тимер юлсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу өсөн көрәш кимәлдә көрәшмәгәнлек менән аңлатырға мөмкин. Ә дисциплина, тимер юлда бөтәһенән дә нығыраҡ булырға тейеш. 1918 йылда уҡ әле В. И. Ленин ҡаты дисциплина һәм единоначалие кәрәклеге тураһында туҡталып, «...Эре машиналы индустрия тибында ойошторолған процестарҙың уңышлы өсөн бер ихтыярға һүҙһеҙ буйһоноу һис шикһеҙ кәрәк. Тимер юл өсөн ул икеләтә, өсләтә» кәрәк, тип күрһәткәйне.

Үткән йылда өлгәшелгән уңыштар менән мауығыу, эш темпын аҙ ғына ла түбәнәйтеү — ул ҙур хата. Республика ауыл хужалығы хәҙер яҙғы сәсеү кампанияһында инде. Ул тимер юлсыларға айырыуса ҙур талаптар ҡуя. Сөнки яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү государство әһәмиәтендәге мөһим эш. Быны һәр бер машинист, ремонтсы, кондуктор, хужалыҡ работнигы, партия ойошмалары һәм администрация етәкселәре — бөтәһе лә аңларға һәм Өфө электр оборудованиелары заводы коллективының май алды социалистик ярышын йәйелдереү тураһындағы саҡырыуына ҡушылып, көстө һәм энергияны колхоздарға, совхоздарға, МТС-тарға ауыл хужалығы машиналарын, яғыулыҡ һәм сәсеү орлоҡтары ташыуҙы өлгөлө ойоштороуға ла бүлергә тейештәр. Беҙҙең предприятиеләребеҙҙең һәм ауыл хужалығының сырьё һәм яғыулыҡ менән тәьмин ителеүендә өҙөклек булыуға һис тә түҙеп торорға ярамай. Был эште яҡшыртыу, юлға һалыу, йөк ташыу процесен ритмле башҡарыу станцияларҙың, тимер юл бүлектәре начальниктәренә, партия һәм профсоюз ойошмалары етәкселәренә йөкмәтелә.

Өфө тимер юлы магистрале политик бүлегенең һәм партия ойошмаларының хәҙерге төп бурысы предприятие коллективтарын йыллыҡ планды срогынан алда үтәргә ойоштороу [illegible]

Сәғәт графигы буйынса

[illegible]. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаты иптәш Низам Аҙҙалов етәкселек иткән 2-се номерлы трактор бригадаһы яҙғы баҫыу эштәренә сәғәт графигы буйынса [illegible]

[illegible]

иптәштәр үҙ-ара социалистик ярышҡа сыҡтылар.

Молотов исемендәге колхоз (председателе иптәш Якупов) [illegible]

[illegible]

Иптәш Аҙҙалов бригадаһы [illegible]

РСФСР Верховный Советенең 1951 йыл 16 апрелдәге ултырыштары тураһында

ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ

[illegible] Кітапхана(?)

Иртәнге ултырыш

16 апрелдә, иртәнге 11 сәғәттә, Кремлдә, Ҙур Кремль дворецында, РСФСР Верховный Советенең өсөнсө ултырышы булып үтте.

РСФСР Верховный Советенең Председателе депутат Л. Н. Соловьев председателлек итте.

РСФСР Верховный Советенең ултырышында 1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджеты тураһында һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетының үтәлеше тураһында доклад буйынса фекер алышыуҙар дауам итте.

Фекер алышыуҙарҙа депутат Г. П. Ковалевский (Дмитриевск округы, Курск өлкәһе), депутат И. А. Наиров (Похвистнево округы, Куйбышев өлкәһе), депутат З. И. Горянова (Кизляр округы, Грозный өлкәһе), депутат И. В. Комзин (Молотов округы, Куйбышев өлкәһе), депутат М. Арбулиев (Буйнак округы, Дағстан АССР-ы), депутат А. Е. Матвеева (Борзинск округы, Чита өлкәһе), И. В. Гусев (Рязань ҡала округы, Рязань өлкәһе), депутат Г. И. Сухарев (Ковровский округы, Владимир өлкәһе), депутат Н. Н. Зайцев (Сталин округы, Молотов ҡалаһы), депутат А. П. Ромашков (Нижне-Амурский округы, Хабаровск крайы), депутат М. Д. Ковригина (Бүҙәк округы, Башҡорт АССР-ы), депутат В. Н. Чирков (Глазов округы, Удмурт АССР-ы) сығыш яһаны.

Шуның менән РСФСР Верховный Советенең өсөнсө ултырышы ябылды.

Киске ултырыш

16 апрелдә, киске 6 сәғәттә, Кремлдә, Ҙур Кремль дворецында, РСФСР Верховный Советенең дүртенсе ултырышы булды.

РСФСР Верховный Советенең Председателе депутат Л. Н. Соловьев председателлек итте.

Ултырышта 1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджеты тураһында һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетының үтәлеше тураһында доклад буйынса фекер алышыуҙар дауам итте.

Фекер алышыуҙарҙа депутат А. С. Борисенко (Пугачев округы, Саратов өлкәһе), депутат С. К. Ламанин (Кашинск округы, Калинин өлкәһе), депутат А. П. Данилова (Якутск-Үҙәк округы, Якут АССР-ы), депутат М. З. Азизов (Шереметьевск округы, Татар АССР-ы), депутат Н. Н. Миротворцев (Мамадыш округы, Татар АССР-ы), депутат Г. Р. Брант (Красно-Горбатск округы, Владимир өлкәһе), депутат А. М. Саланов (Арзамас округы, Горький өлкәһе), депутат Д. П. Преферансов (Орск ҡала округы, Чкалов өлкәһе), депутат И. Г. Шкарбанов (Киров округы, Новосибирск ҡалаһы) сығыш яһаны.

Шуның менән РСФСР Верховный Советенең дүртенсе ултырышы ябылды.

СССР-ҙың 1946—1950 йылдарға дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планы үтәлеше йомғаҡтары тураһында СССР Государство план комитетенең һәм СССР Үҙәк Статистика Управлениеһенең

БЕЛДЕРЕҮЕ

1946 йылдың мартында СССР Верховный Советы тарафынан 1946 — 1950 йылдарға ҡабул ителгән СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планы уңышлы үтәлде, ә пландың иң мөһим заданиелары байтаҡ арттырып үтәлде.

Биш йыллыҡ пландың промышленность өлкәһендә үтәлеше

Үҙған биш йыллыҡта СССР промышленносен аяҡҡа баҫтырыуға һәм үҫтереүҙә ҙур уңыштарға өлгәшелде. Биш йыллыҡ план СССР-ҙың бөтә промышленносеның продукцияһы күләме 1950 йылда — биш йыллыҡтың һуңғы йылында, һуғышҡа тиклемге 1940 йыл менән сағыштырғанда, 48 процентҡа арттырылырға тейеш тип билдәләгәйне. Фактик алғанда, 1950 йылда промышленность продукцияһы, 1940 йылдағыға ҡарағанда, 73 процентҡа күберәк етештерелде. СССР промышленносе тарафынан биш йыллыҡ план срогынан алда — 4 йылда 3 айҙа үтәлде. Биш йыллыҡ план тарафынан промышленность продукцияһының күләме буйынса 1950 йылға билдәләнгән задание 17 процентҡа арттырып үтәлде. Хәҙерге заман техникаһының яңы ҡаҙаныштарын индереү нигеҙендә социалистик промышленностең бөтә тармаҡтары техник кимәлен артабан күтәреү тәьмин ителде.

Биш йыллыҡ план заданиелары ҡара металлургия өлкәһендә ҡорос иретеү һәм прокат етештереү буйынса арттырып үтәлде. Биш йыллыҡ план тарафынан 1950 йылға билдәләнгән ҡара металдар прокаты етештереү кимәленә срогынан алда — 1949 йылдың III кварталында, ә ҡорос етештереү кимәленә — 1950 йылдың II кварталында өлгәшелде. Ҡара металлургия министерствоһы суйын иретеү буйынса биш йыллыҡ планды үтәне. Ҡара металдар етештереү 1950 йылға, тотош алғанда, биш йыллыҡ планда ҡаралғанса, 35 процент урынына һуғышҡа тиклемге кимәлде 45 процентҡа уҙып китте; шул уҡ ваҡытта суйын етештереү, һуғышҡа тиклемге кимәл менән сағыштырғанда, 29 процентҡа, ҡорос иретеү — 49 процентҡа һәм прокат етештереү 59 процентҡа артты. Һуғыш ваҡытында тулыһынса емертелгән Көньяҡ металлургия промышленносе яңы техник базала аяҡҡа баҫтырылды һәм металды, һуғышҡа тиклемгегә ҡарағанда, күберәк бирә. Илдең көнсығыш районадарында ҡара металлургияны артабан үҫтереү дауам иттерелде. Уралда суйын етештереү 1950 йылда, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 2,6 тапҡырға, ҡорос — 2,7 тапҡырға һәм прокат етештереү 2,8 тапҡырға артты. Себерҙә суйын етештереү 1,2 тапҡырға, ҡорос — 1,7 тапҡырға һәм прокат 2 тапҡырға артты. Урта Азияла һәм Закавказьела ҡара металдар етештереү ойошторолдо. Ҡорос һәм прокат буйынса пландың арттырылып үтәлеүенә ҡарамаҫтан ҡара металдар, бигерәк тә прокаттың ҡайһы бер төрҙәрен етештереү халыҡ хужалығының үҫә барған талаптарынан артта ҡала.

Ҡара металлургияла производство технологияһы камиллаштерелде. Ҡорос иретеү производствоһында кислород ҡулланыу үҙләштерелде. Машиналарҙың һәм приборҙарҙың яңы төрҙәрен эшләү өсөн прокаттың махсус профилдәрен һәм ҡоростоң махсус маркаларын етештереү үҙләштерелде. Производство процестарында күп көс һалыуҙы талап иткән һәм ауыр эштәрҙе механизациялау һәм автоматлаштырыу киң күләмдәрҙә тормошҡа ашырылды. Оборудованиеларҙы файҙаланыу байтаҡ яҡшыртылды. Мәҫәлән, 1950 йылдың аҙағында Ҡара металлургия министерствоһы заводтарында домна мейестәренең файҙалы күләмен файҙаланыу, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 25 процентҡа, ә мартен мейестәре төбөнөң бер квадрат метр майҙанынан ҡорос алыу 33 процентҡа артты.

Төҫлө металлургия өлкәһендә яңы рудниктәр, байыҡтырыу фабрикалары һәм заводтар төҙөү, шулай уҡ хәрәкәт итеүсе предприятиеларҙың эшен яҡшыртыу һөҙөмтәһендә баҡыр, алюмин, никель, ҡара ҡурғаш, цинк һәм башҡа төҫлө, шулай уҡ һирәк осрай торған металдар етештереү һуғышҡа тиклемге кимәлде байтаҡ уҙып китте. Ләкин халыҡ хужалығының үҫә барған талаптары төҫлө металдарҙы тағы ла йылдамыраҡ етештереүҙе талап итәләр.

Күмер сығарыу буйынса биш йыллыҡ план арттырып үтәлде. 1950 йылда күмер сығарыу биш йыллыҡ план заданиеһына ҡарата 104 процент тәшкил итте һәм, һуғышҡа тиклемге кимәл менән сағыштырғанда, 57 процентҡа артты. Биш йыллыҡ план тарафынан 1950 йылға билдәләнгән күмер сығарыу кимәленә Күмер промышленносе министерствоһы шахталарында срогынан алда — 1949 йылдың IV кварталында өлгәшелде. Һуғыштан зыян күргән районадарҙа күмер шахталары аяҡҡа баҫтырылды. Донбасс шахталары күмерҙе һуғышҡа тиклемгегә һәм биш йыллыҡ планда ҡаралғандан күберәк бирәләр. Донбасс яңынан илдең иң эре, иң механизациялаштырылған күмер бассейны булып әүерелде. Мәскәү яңы бассейнында, күмер сығарыу һуғышҡа тиклемге кимәл менән сағыштырғанда, 3 тапҡырға артты. Донбассты һәм Мәскәү яны бассейнын аяҡҡа баҫтырыу менән бер рәттән Уралда, Кузбасста, Ҡарағанда бассейнында һәм илдең башҡа районадарында күмер промышленносен үҫтереү дауам иттерелде. Көнсығышта 1950 йылда күмер, һуғышҡа тиклемге ваҡытҡа ҡарағанда, 2 тапҡырға артығыраҡ сығарылды. Яңы күмер базаһы — Печора бассейны байтаҡ киңәйтелде. Торф сығарыу ҙа һуғышҡа тиклемге кимәл уҙып кителде.

Күмер киҫеү, ватыу һәм ташыу процестарын механизациялаштырыу, шулай уҡ ер аҫты транспорты һәм тимер юл вагондарына күмер тейәүҙе механизациялаштырыу тамамланды. Таҙартыу забойҙарына күмер бушатыуҙы механизациялаштырыу өсөн, шулай уҡ күмерҙе һәм токомдарҙы әҙерләп эшкәртеүҙәргә тейәү өсөн яңы машиналар эшләнде һәм индерелде. Күмер шахталарын комплекслы механизацияға күсереү буйынса эштәр башланды, һәм машиналар, шулай уҡ механизмдар эшенә алыҫтан тороп һәм автоматик идара итеү индерелә.

Биш йыллыҡ пландың нефть промышленносен аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү буйынса заданиеһе арттырып үтәлде. 1950 йылда нефть сығарыу биш йыллыҡ план заданиеһына ҡарата 107 процент тәшкил итте һәм һуғышҡа тиклемгегә ҡарағанда 22 процентҡа күберәк булды. Һуғыш ваҡытында емертелгән Майкоп һәм Грозный нефть районадары нефть промышленносе һәм Көнбайыш Украинаның нефть промышленносе тулыһынса аяҡҡа баҫтырылды, техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырылды. Геологик-разведка эштәрен уңышлы үткәреү һөҙөмтәһендә, нефттең һәм газдың байтаҡ яңы промышленность запастары асылды һәм әҙерләнде. Нефть сығарыуҙа, скважиналар бораулауҙа һәм нефть эшкәртеүҙә яңы техника киң индерелә. Юғары октанлы авиация яғыулығын һәм авиация майҙарын етештереү киңәйтелде һәм эшләп сығарыла торған нефть продукттарының сифаты яҡшырҙы. Тыуған илебеҙҙә эшләнгән хәҙерге заман техникаһы менән ҡоралланған яңы нефть эшкәртеү заводтары һәм установкалары төҙөлдө, эре магистраль нефтепроводтар һалынды. Шуның менән бергә, нефть сығарыуҙың йылдам үҫеүе яңы нефть эшкәртеү заводтарын тағы ла күберәк төҙөүҙе талап итә.

Көнсығышта яңы нефть районадарының әһәмиәте бик ныҡ үҫте. Башҡорт АССР-ында эре яңы нефть промыслалары һәм нефть эшкәртеүсе заводтар төҙөлдө. Куйбышев өлкәһендә, Төркмән ССР-ында, Үзбәк ССР-ында һәм Ҡаҙаҡ ССР-ында нефть сығарыу һәм эшкәртеү йылдам рәүештә үҫә. Татар АССР-ында яңы эре нефть ятыуҙары асылды. Көнсығыш районадарҙың удель ауырлығы Союз буйынса дөйөм нефть сығарыуҙа 1940 йылдағы 12 процент урынына 44 процентҡа тиклем үк артты.

Газ промышленносе артабан үҫтерелде. Саратов — Мәскәү, Дашава — Киев, Кохтла — Ярве — Ленинград газопроводтары төҙөлдө һәм хәрәкәткә индерелде. Яһалма шыйыҡ яғыулыҡ етештереү буйынса предприятиелар төҙөлөшө йәйелдерелде.

Электр энергияһы етештереү буйынса биш йыллыҡ пландың заданиеһе арттырып үтәлде. Биш йыллыҡ план тарафынан 1950 йылға билдәләнгән электр энергияһы етештереү кимәленә срогынан алда — 1949 йылдың IV кварталында өлгәшелде. 1950 йылда электр энергияһы етештереү биш йыллыҡ планға ҡарата 110 процент тәшкил итте һәм 1940 йылдың кимәлен 87 процентҡа уҙып китте. Һуғыштан зыян күргән районадарҙа электр энергияһы 1940 йылдағыға ҡарағанда байтаҡ күберәк етештерелде.

Һуғыш ваҡытында емертелгән Донбасс, Днепр яны, Киев, Харьков, Львов, Одесса, Николаев, Севастополь, Новороссийск, Краснодар, Грозный, Сталинград, Воронеж, Брянск, Калинин, Минск, Вильнюс, Рига, Таллин, Петрозаводск һәм башҡа ҡалаларҙың электр станциялары аяҡҡа баҫтырылды. Биш йыллыҡ планда ҡаралған бөтә гидроэлектростанциялар, шул иҫәптә 6 эре гидроэлектростанция аяҡҡа баҫтырылды. Ленин исемендәге Днепр гидроэлектростанцияһы аяҡҡа баҫтырылды. Яңы гидроэлектростанциялар Щербаковск, 3-сө номерлы Нива, Фарход, Храмск, Сухуми, Краснополянск, Широковск һәм башҡа гидростанциялар төҙөлдө һәм тулыһынса хәрәкәткә индерелде. Верхне-Свирск, Усть-Каменогорск, Гөмүшский, Цимлянский, 1-се номерлы Нива, Маткожненск һәм башҡа гидроэлектростанцияларын 1951—1952 йылдарҙа хәрәкәткә индереүҙе тәьмин итеүсе ҙур төҙөлөш эштәре тормошҡа ашырылды. Волга йылғаһында Горький гидроэлектростанцияһы һәм Камала Молотов гидроэлектростанцияһы төҙөлөшө киң йәйелдерелде. Яңы теплоэлектростанциялар электр һәм тепловой селтәрҙәр төҙөү эше тормошҡа ашырылды.

1946 — 1950 йылдарҙа электр станцияларында эре яңы энергетик техниканы индереү тормошҡа ашырылды. Теплоэлектростанцияларҙа Тыуған илебеҙҙә эшләнгән яңы пар турбиналары һәм юғары баҫымлы ҡаҙандар, шул иҫәптән 25-әр мең киловатт ҡеүәтле юғары баҫымлы теплофикацион турбиналарҙың яңы типтары, 100 атмосфера баҫымлы һәм 510 градус температуралы пары булған барабанлы ҡаҙандар, шулай уҡ парҙың шундай уҡ параметрына арналы төҙ ҡаҙандар ҡуйылды. Водород менән һыуытыла торған генераторҙар, юғары напряжениеның һауа выключателдәре, һаҡланыуҙың юғары чистоталы һәм башҡа хәҙерге заман типтары, шулай уҡ электр станцияларында яғыу процестарын һәм ҡаҙандарҙы тәьмин итеү процестарын механизациялаштырыу индерелде. Район гидростанцияларының өстән ике өлөшөнең агрегаттарға автоматлаштырылған управлениеһе бар.

Машиналар төҙөү өлкәһендә, станоктар, машиналар һәм приборҙар етештереү буйынса биш йыллыҡ план заданиеләре, тотош алғанда, 17 процентҡа арттырылып үтәлде. 1950 йылда машиналар төҙөлөш продукцияһы 1940 йылдағы производствонан 2,3 тапҡырға артты. Биш йыллыҡ план тарафынан 1950 йылға билдәләнгән машиналар, оборудованиелар һәм приборҙар етештереү кимәленә срогынан алда — 1950 йылдың I кварталында өлгәшелде.

Машиналар һәм оборудованиелар етештереүҙең үҫеше яңы техник базала алып барылды. Машиналар төҙөү заводтарында производствоның юғары эффектле методтары һәм технология процестары: эшкәртеүҙең өҙлөкһөҙ ағылышлы һәм автоматик линиялары, флюс ҡатламы аҫтында автоматтар һәм ярым автоматтар менән сварка яһау, деталдәрҙе юғары частоталы токтар менән сыныҡтырыу, центробежный ҡойоуҙар һәм кокилгә ҡойоуҙар, штамплау, металды тиҙләтелгән методтар менән ҡырҡыу методтары киң ҡулланыу таптылар.

Биш йыллыҡ план йылдарында машиналар төҙөлөшө тармаҡтары сығарыла торған продукцияның номенклатураһын нигеҙҙә яңырттылар. Дөйөм ҡулланыу әһәмиәтендә булған металл ҡырҡыусы станоктарҙың 250-гә яҡын яңы тибы, махсус һәм агрегат станоктарҙың бер меңдән дә артыҡ тибы, автомат һәм ярым автоматлы 23, тимерлек пресслы автоматтарҙың 34 тибы, ҡеүәтле пневматик формовка машиналары, баҫым аҫтында ҡойоу һәм центробежный ҡойоу өсөн машиналар үҙләштерелде. Автомобиль деталдәрен эшләү буйынса 26 автоматик станок линиялары һәм автоматик завод төҙөлдө.

1950 йылда металлургия оборудованиеларе етештереү, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 4,8 тапҡырға, пар турбиналары сығарыу 2,6 тапҡырға, электр оборудованиеләре етештереү 3 тапҡырға артты. Яғыулыҡ промышленносе өсөн күмер комбайндары, токомдар һәм күмерҙәр тейәү машиналары, ҙур тәрәнлеккә бораулау өсөн нефть бораулау установкалары, иҙелмә биреүсе ҡеүәтле насостар һәм юғары етештереүсәнлекле оборудованиеларҙың башҡа бик күп төрҙәре эшләнде. Нефть аппаратуралары етештереү 1950 йылда, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 3 тапҡырға артты.

Тимер юл транспорты ихтыяждары өсөн яңы магистраль йөк ташыу паровоздары, электровоздары, тепловоздары, думпкарҙары, металлик гондолалар һәм изотермик вагондар, цельнометаллик пассажир вагондары етештереү өйрәнелде һәм ойошторолдо.

1950 йылда тракторҙар сығарыу, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 3,8 тапҡырға, комбайндар — 3,6 тапҡырға, трактор һабандары — 3,1 тапҡырға, трактор сәскестәре — 5,5 тапҡырға, трактор культиваторҙары — 3,1 тапҡырға артты, 150-нән дә артыҡ яңы юғары етештереүсәнлекле ауыл хужалығы машиналары етештереү үҙләштерелде һәм массовый рәүештә етештереләүгә ҡабул ителде.

(Аҙағы 2-се биттә).

СССР-ҘЫҢ 1946—1950 ЙЫЛДАРҒА ДҮРТЕНСЕ (ҺУҒЫШТАН ҺУҢҒЫ БЕРЕНСЕ) БИШ ЙЫЛЛЫҠ ПЛАНЫ ҮТӘЛЕШЕ ЙОМҒАҠТАРЫ ТУРАҺЫНДА СССР ГОСУДАРСТВО ПЛАН КОМИТЕТЕНЕҢ ҺӘМ СССР ҮҘӘК СТАТИСТИКА УПРАВЛЕНИЕҺЕНЕҢ БЕЛДЕРЕҮЕ

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).

Ләкин ауыр металл ҡырҡыусы һәм тимерселек-прессовка оборудованиеларының энергетик йыһаздарын, нефть промышленносе өсөн ҡатмарлы оборудованиеларҙың һәм приборҙарҙың ҡайһы бер төрҙәрен етештереүҙең өлгәшелгән кимәле халыҡ хужалығының үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндермәйҙәр.

Химия промышленносе өлкәһендә биш йыллыҡ план тарафынан 1950 йылда һуғышҡа тиклемге кимәлде 1,5 тапҡырға уҙып китеү билдәләнгәйне. Химия промышленносеның фактик продукцияһы һуғышҡа тиклемге кимәлде 1,8 тапҡырға уҙып китте. 1950 йылда азот ашламалары етештереү һуғышҡа тиклемге кимәлде 2,2 тапҡырға һәм калий ашламалары етештереү 1,4 тапҡырға уҙып китте, йәғни, биш йыллыҡ планда ҡаралғандан, күберәк эшләнде. 1950 йылда фосфат ашламалары етештереү, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 1,9 тапҡырға артты. Синтетик каучук етештереү, һуғышҡа тиклемге кимәл менән сағыштырғанда, артты.

Яһалма сүс, пластик масса промышленносе өсөн, химия промышленносеның ҡаҡ буяу, фармацевтик башҡа тармаҡтары өсөн аңы төр продукциялар етештереү өйрәнелде һәм байтаҡ киңәйтелде. Биш йыллыҡ план буяу әйберҙәре етештереү буйынса арттырып үтәлде. 1950 йылда сығарыла торған буяу маркаларының һаны 1940 йылдағы 186 урынына 320 бергә тиклем үҫте. Шуның менән бергә, юғары сифатлы һәм оҙаҡ йәшәй торған буяуҙар етештереү үҫте. Күп төҫлө кинопленкалар етештереү үҙләштерелде.

Төҙөләш материалдары етештереү һуғышҡа тиклемге кимәлде уҙып китте. 1950 йылға цемент етештереү 1940 йыл менән сағыштырғанда, 1,8 тапҡырға, тәҙрә быяһы етештереү 1,9 тапҡырға артты. Биш йыллыҡ пландың цемент етештереү буйынса 1950 йылға билдәләнгән заданиеһе СССР Төҙөләш материалдары промышленносе министерствоһы тарафынан 101 процентҡа, ә СССР буйынса тотош алғанда 97 процентҡа үтәлде. Биш йыллыҡ пландың кирбес һәм черепица етештереү буйынса заданиеһе тулыһынса үтәлеп етмәне. Төҙөләш материалдары етештереү һәм уларҙың сифаты халыҡ хужалығының үҫә барған талаптарынан һаман артта ҡала әле.

Урман промышленносенда 1950 йылда төҙөләш ағастары сығарыу, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 36 процентҡа артты, ләкин биш йыллыҡ план заданиеһе тулыһы менән үтәлеп етмәне. Урман промышленносенә машиналар һәм механизмдар бирергә биш йыллыҡ план заданиеһе арттырылып үтәлде, ләкин, механизмдарҙы ҡәнәғәтләнерлек рәүештә файҙаланмау һөҙөмтәһендә, биш йыллыҡ план йылдарында ағас әҙерләү промышленносендә хеҙмәт етештереүсәнлегенең үҫеш темптары етерлек булманы. Һағыҙ етештереү 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, 47 процентҡа артты.

1946—1950 йылдар осоронда туҡыу, тегеү, трикотаж, аяҡ кейемдәре һәм еңел промышленностең башҡа тармаҡтарын йылдам аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү үткәрелде. 1950 йылда промышленностең был тармаҡтарының продукцияһы, 1940 йылға сағыштырғанда, 17 процентҡа артты. Еңел промышленностең төп изделиеларен етештереү биш йыллыҡта: киже-мамыҡ туҡымалары буйынса — 2,4 тапҡырға, йөн туҡымалары — 2,9 тапҡырға, ойоҡ-ойоҡбаш изделиелары — 5,2 тапҡырға, күн аяҡ кейемдәре — 3,2 тапҡырға, резина аяҡ кейемдәре — 7 тапҡырға артты, ләкин киже-мамыҡ туҡымаларын һәм аяҡ кейемдәрен етештереү буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе үтәп еткерелмәне. Туҡымаларҙың, тегелгән, трикотаж изделиеларҙың һәм аяҡ кейемдәренең ассортименте байтаҡ яҡшырҙы һәм киңәйтелде.

Аҙыҡ промышленносеның төп продукттарын етештереү биш йыл эсендә байтаҡ күләмдәрҙә үҫте. 1950 йылда мал майы етештереүҙең һуғышҡа тиклемге кимәле 57 процентҡа, үҫемлек майы һәм башҡа майҙар — 10 процентҡа, ит — 7 процентҡа, балыҡ тотоу — 27 процентҡа, колбаса изделиеларен етештереү — 20 процентҡа, консервалар — 48 процентҡа, шәкәр — 17 процентҡа, кондитер изделиелары — 23 процентҡа һәм һабын етештереү — 16 процентҡа уҙып китте. Аҙыҡ продукттарының ассортименте киңәйҙе һәм сифаты яҡшырҙы. 1950 йылда етештерелгән бөтә аҡ майҙың 75 проценте һәм етештерелгән сырҙың 42 проценте юғары сортлы продукцияны тәшкил итте. Диэтик продукттар етештереү, һуғышҡа тиклемге кимәлгә сағыштырғанда, 5 тапҡырға, балалар аҙығы — 5,7 тапҡырға, витаминдар етештереү 10,4 тапҡырға артты.

Урындағы промышленность һәм промысла кооперацияһы валовой продукция етештереүҙә 1950 йылда һуғышҡа тиклемге кимәлгә сағыштырғанда, 1,5 тапҡырға арттырҙылар. Ләкин киң ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙә арттырыу өсөн сырьеның урындағы төрҙәре әле булһа етерлек тиклем файҙаланылмай. Урындағы промышленность һәм промысла кооперацияһы продукцияһының ассортименте һәм сифаты халыҡтың үҫә барған талаптарынан артта ҡала.

СССР-ҙың бөтә промышленносеның төп производство фондтары Ватаныбыҙҙың алдынғы техникаһы менән байытылған предприятиеларҙы төҙөү һәм реконструкциялауҙы аяҡҡа баҫтырыу һөҙөмтәһендә, 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, 58 процентҡа артты. Шул уҡ ваҡытта станоктар паркы, яңы һәм тағы ла етештереүсәнлеклерәк станоктар менән тулыландырыу иҫәбенә, биш йыллыҡ аҙағына, 1940 йылға сағыштырғанда, ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа артты. Бер эшсегә иҫәпләгәндә промышленноста хеҙмәттең электр менән ҡоралланыуы 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, 1,5 тапҡырға артты.

Яңы техниканы уңышлы индереү ҙур масштабтарҙа халыҡ хужалығын артабан техник ҡайтанан ҡоралландырыуҙы үткәрергә һәм күп хеҙмәт талап итеүсе һәм ауыр эштәрҙе механизациялаштырыу кимәлен күтәрергә мөмкинлек бирҙе. Шуның менән бер рәттән техник прогресс, эшселәрҙең, инженерҙар һәм техниктарҙың квалификацияһын күтәреү һәм уларҙың ижади инициативаһы хеҙмәт етештереүсәнлегенең байтаҡ үҫеүен тәьмин итте. Промышленноста эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге 1950 йылда, һуғышҡа тиклемге 1940 йылға ҡарағанда, биш йыллыҡ план менән билдәләнелгән 36 процент урынына, 37 процентҡа артты. Төҙөләштә хеҙмәт етештереүсәнлеге 1950 йылда 1940 йылғы кимәлдән 23 процентҡа уҙып китте.

Промышленноста оборудованиеҙы яҡшыраҡ файҙаланыу, сырьены, яғыулыҡты һәм электр энергияһын экономлыраҡ тотоноу, материалдарҙың юғалыуын һәм отходҡа сығыуын кәметеү, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү һөҙөмтәһендә промышленность продукцияһының **үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу буйынса** биш йыллыҡ план менән 1950 йылға билдәләнелгән задание үтәлде.

Төҙөләш эштәренең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе үтәлеп еткерелмәне. Капиталь эштәрҙең байтаҡ үҫеүенә ҡарамаҫтан, төҙөләштең үҙенә төшөү хаҡы әле булһа ҡыйбат булыуҙа дауам итә. Был айҡанлы Хөкүмәт тарафынан 1950 йылда төҙөләштә арзанайтыу һәм проектлаштырыуҙы яҡшыртыу, төҙөләш материалдарын етештереүҙе арттырыу, шулай уҡ капиталь төҙөләштә планлаштырыу һәм тәьмин итеү өлкәһендәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн саралар күрелде.

Ауыл хужалығы өлкәһендә биш йыллыҡ планды үтәү

Биш йыллыҡ планды уңышлы үтәү һөҙөмтәһендә ауыл хужалығы яңы ҡеүәтле күтәрелешкә өлгәште. Биш йыллыҡ йылдар эсендә колхоздарҙың общественный хужалығы үҫте һәм тағы ла күберәк нығыны.

Ауыл хужалығының материаль-техник базаһы үҫте, колхоз производствоһында машина-трактор станцияларының роле күтәрелде, ауыл хужалығы производствоһын ойоштороусыларҙың, игенселек, малсылыҡ һәм механизация эше мастерҙарының квалификациялы яңы кадрҙары етештерелде.

Бөртөклө ашлыҡ культуралары буйынса сәсеү майҙандары биш йыллыҡта 20 проценттан ашыуыраҡҡа артты. 1950 йылда бөртөклө ашлыҡтың валовой урожайы 1940 йылғы кимәлдән 345 миллион ботҡа артып китте, шуның менән бергә бойҙай етештереү һуғышҡа тиклемге кимәлгә ҡарағанда 376 миллион ботҡа артты. Бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайлылығы буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе арттырып үтәлде. 1949 һәм 1950 йылдарҙа бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайлылығы, 1940 йылға ҡарағанда, 13 процентҡа юғары булды.

Техник культуралар буйынса сәсеү майҙандары биш йыллыҡта 59 процентҡа, шул иҫәптән мамыҡ сәсеү майҙаны 91 процентҡа, оҙон етен — 90 процентҡа, шәкәр сөгөлдөрө — 57 процентҡа, көнбағыш — 23 процентҡа артты. Биш йыллыҡта мамыҡтың валовой урожайы 2,9 тапҡырға, етен-сүс 2 тапҡырҙан да күберәк, шәкәр сөгөлдөрө 2,7 тапҡырға, көнбағыш — 70 процентҡа артты.

Урожай йыйнау ваҡытында, атап әйткәндә, бөртөклө ашлыҡ, оҙон етендә һәм шәкәр сөгөлдөрөн йыйнау ваҡытында юғалтыуҙарҙың әле лә урын алып килеүе ауыл хужалығы культураларын етештереүҙә серьез етешһеҙлек булып тора.

Йәшелсә-баҡса культуралары һәм картоф буйынса сәсеү майҙандары, 1940 йылға сағыштырғанда, 5 процентҡа артты, ә картофтың валовой урожайы 1950 йылда һуғышҡа тиклемге кимәлдән 21 процентҡа артып китте.

Биш йыллыҡ эсендә Мәскәү, Ленинград, Баку, Харьков, Киев, Горький ҡалалары, Урал, Донбасс, Кузбасс промышленность үҙәктәре, Себер һәм Алыҫ Көнсығыш ҡалалары, шулай уҡ башҡа ҙур ҡалалар тирәһендә картоф-йәшелсә базаларын артабан нығытыу һәм киңәйтеүҙә байтаҡ эштәр башҡарылды.

Мал аҙыҡтары культуралары буйынса сәсеү майҙаны, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 1950 йылда 15 процентҡа артты, шулай ҙа күп йыллыҡ үлән майҙандарын арттырыу буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе үтәлеп еткерелмәне һәм мал аҙығы етештереү малсылыҡтың үҫә барған талабынан артта ҡала.

Малсылыҡ буйынса — колхоздарҙың общественный малдар һанын үҫтереүҙең биш йыллыҡ план заданиеһе арттырып үтәлде. Колхоздарҙың продукт биреүсе малдар һәм ҡоштар һаны һуғышҡа тиклемге кимәлде байтаҡ уҙып китте: мөгөҙлө эре малдар — 40 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләр — 63 процентҡа, сусҡалар — 49 процентҡа, ҡоштар — 2 тапҡырға артты. Хужалыҡтарҙың бөтә категориялары буйынса — колхоздарҙа, совхоздарҙа, колхозсыларҙың һәм ялғыҙаҡтарҙың, эшсе һәм хеҙмәткәрҙәрҙең һуғыш ваҡытында ныҡ кәмегән продукт биреүсе малдарының дөйөм һаны аяҡҡа баҫтырылды һәм 1950 йылда ул, 1940 йылға сағыштырғанда, 4 процентҡа, ә ҡоштар һаны 14 процентҡа артты. Биш йыллыҡ йылдарында колхоздарҙа һәм совхоздарҙа малсылыҡ эшендә тоҡомсолоҡто яҡшыртыуҙа байтаҡ эштәр үткәрелде: тоҡомсолоҡ совхоздарының, государство тоҡомсолоҡ рассадниктарының һәм колхоздарҙың тоҡомсолоҡ фермаларының селтәре киңәйтелде.

Ауыл хужалығының техник ҡоралланышы үҫте. Биш йыллыҡта ауыл хужалығына ун биш ат көсләгә әйләндергәндә 536 мең трактор, бөртөклө ашлыҡ йыйнаусы 93 мең комбайн, шул иҫәптән үҙе йөрөй торған 39 мең комбайн, 341 мең трактор һабаны, 254 мең трактор сәскесе, 249 мең трактор культиваторҙары һәм бик күп һанда тупраҡ эшкәртеүсе башҡа машиналар, сәсеү һәм урожай йыйнау машиналары бирелде.

Шул уҡ ваҡытта ауыл хужалығын мамыҡ, етен һәм киндер, шәкәр сөгөлдөрө йыйнау машиналары менән, мал аҙыҡтары етештереүҙә һәм колхоздарҙың, совхоздарҙың малсылыҡ фермаларында күп хеҙмәт талап иткән эштәрҙе механизациялауҙы тәьмин итеүҙә артта ҡалыусылыҡ урын алып килә әле. Колхоздарҙы, машина-трактор станцияларын һәм совхоздарҙы электрлаштереү буйынса күп кенә эштәр башҡарылды. 1950 йылдың аҙағына ауыл электростанцияларының ҡеүәте, 1940 йылға ҡарағанда, 2,8 тапҡырға артты.

Игенселектең культураһын күтәреүҙә ҙур уңыштарға өлгәшелде: колхоздарҙа һәм совхоздарҙа баҫыусылыҡта һәм мал аҙығының үлән баҫыулы дөрөҫ сәсеү әйләнешен индереү һәм үҙләштереү эштәре йәйелдерелде; 1950 йылда колхоздарҙа бөтә төр һөрөү һәм түңгә һөрөү эштәренең 90 проценттан күберәге тракторҙар менән башҡарылды; тракторҙар менән һөрөлгән бөтә ерҙең 87 проценте предплужниклы һабандар менән һөрөлдө; ә 1940 йылда иң бары предплужниклы һабандар менән 13 процент кенә һөрөлгәйне. Түңгә һөрөлгән ергә һәм таҙа парға сәселгән яровой культуралар майҙаны колхоздарҙа 1950 йылда бөтә майҙандың 63 процентын тәшкил итте, ә 1940 йылда 54 процент кенә булғайны; биш йыллыҡта бөртөклө ашлыҡ культураларының сортлы сәсеүлектәре 64 процентҡа, ә бойҙай сәсеүлеге — 2 тапҡырға артты; колхоздарҙа бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының яртыһы комбайндар менән йыйналды.

Баҫыу һаҡлаусы урман үҫтереү буйынса заданиелар уңышлы тормошҡа ашырыла. Колхоздар, совхоздар, машина-трактор станциялары, лесхоздар һәм урман үҫтереү станциялары, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсә планын тормошҡа ашырып, 1 миллион 350 мең гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы ағас ултырттылар һәм сәстеләр. Уларҙың 760 мең гектары 1950 йылда ултыртылды.

Совхоз төҙөлөшө өлкәһендә биш йыллыҡ план заданиеһе үтәлде. Совхоздар биш йыллыҡта ауыл хужалығы культуралары майҙанын байтаҡ киңәйттеләр. Бөртөклө ашлыҡ культуралары урожайлылығы 1950 йылда 1940 йылғы урожайлылыҡтан 16 процентҡа уҙып китте. СССР Совхоздар министерствоһының совхоздарында баҫыу эштәрен механизациялау нигеҙҙә тамамланған. 1950 йылда һөрөү, сәсеү һәм бөртөклө ашлыҡ культураларын йыйнау эшенең 95 проценттан артығыраҡы механик көс менән үтәлде. 1950 йыл аҙағына СССР Совхоздар министерствоһының совхоздарында мөгөҙлө эре малдар һаны, һуғышҡа тиклемгегә ҡарағанда, 20 процентҡа, һарыҡтар һәм кәзәләр — 29 процентҡа һәм сусҡалар һаны 36 процентҡа артығыраҡ булды. Малдарҙың продукт биреүсәнлеге байтаҡ күтәрелде. 1950 йылда СССР Совхоздар министерствоһының совхоздарында бер һыйырҙан уртаса һөт һауып алыу 1940 йылғы кимәлдән 28 процентҡа артыҡ булды.

Биш йыллыҡ йылдарында колхоздарҙы **ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыу** ауыл хужалығы артеленең Уставын боҙоуҙарҙы бөтөрөү буйынса ҙур эш башҡарылды; колхоздарҙа хеҙмәт ойоштороуҙы һәм уға түләүҙе тәртипкә һалыуҙы яҡшыртыу, артель хеҙмәтен ойоштороуҙың төп формаһы итеп даими производство бригадаһын нығытыу саралары тормошҡа ашырылды; колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһы байтаҡ нығыны һәм хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде. Колхоздарҙың бүленмәй торған фондтары 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, 1,6 тапҡырға артты.

Немец оккупацияһына дусар ителгән Литва, Латвия, Эстония, Молдавия союзный республикаларының һәм Украина ССР-ы, Белорус ССР-ы көнбайыш өлкәләренең крәҫтиән хужалыҡтарына ауыл хужалығы кооперацияһын нығытыу, машина-трактор станцияларын ойоштороу, тракторҙар һәм машиналар, минераль ашламалар ташыу буйынса Советтар Союзы тарафынан кредит биреү юлы менән ҙур производство ярҙамы күрһәтелде. Биш йыллыҡ аҙағына был райондарҙа ирекле башланғыстарҙа крәҫтиәндәр хужалыҡтарын коллективлаштырыу нигеҙҙә тамамланды.

Социалистик ауыл хужалығы производствоһының үҫеше, уның юғары тауарлылығы халыҡтың икмәккә, иткә, һөткә һәм башҡа аҙыҡ-түлек продукттарына үҫә барған талабын тәьмин итергә һәм колхоздарҙың, колхозсыларҙың доходтарын арттырыуға мөмкинлек бирҙе. Бөртөклө ашлыҡ һәм техник культураларҙы етештереүҙең һәм малсылыҡ продукцияһының артыуы, еңел һәм аҙыҡ промышленносен артабан күтәреү өсөн ныҡлы сырье базаһын тыуҙырҙы.

Транспорт һәм связь өлкәһендә биш йыллыҡ пландың үтәлеше

Тимер юл транспорты биш йыллыҡ йылдарында халыҡ хужалығының тауар ташыуға үҫә барған талабын тәьмин итте. Тимер юл транспортының йөк әйләнеше буйынса 1950 йылға билдәләнелгән заданиеһе 13 процентҡа арттырып үтәлде. Тимер юлдарында уртаса тәүлеккә йөк тейәү 1950 йылда 1940 йылғы кимәлдән 121 процент һәм биш йыллыҡ план заданиеһенән 103 процент тәшкил итте.

Хеҙмәттең алдынғы методтарын һәм яңы техниканы индереү һөҙөмтәһендә тимер юлдарҙың техник средстволарын файҙаланыу байтаҡ яҡшырҙы. 1950 йылда тауар вагондарына йөк тейәү, 1940 йылға ҡарағанда, 14 процентҡа, йөк ташый торған поездың уртаса ауырлығы, 1940 йылға ҡарағанда, 10 процентҡа артты. Тауар вагонының тәүлегенә уртаса йөрөш тиҙлеге һуғышҡа тиклемге кимәлдән 4,6 процентҡа уҙып китте. Биш йыллыҡ эсендә вагон әйләнеше тиҙләтелде, ләкин 1950 йылда биш йыллыҡ план менән күҙҙә тотолған кимәлгә өлгәшелмәне әле. Һуғыштан зыян күргән райондарҙа халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм рациональ булмаған йөк ташыуҙы бөтөрөү буйынса үткәрелгән саралар һөҙөмтәһендә йөк ташыуҙың уртаса алыҫлығы биш йыллыҡта кәмене, ләкин йөк ташыу алыҫлығын кәметеү буйынса 1950 йылға билдәләнгән задание үтәп еткерелмәне.

Һуғыш тарафынан тимер юл транспортына яһалған ҙур емерелеүҙәрҙе бөтөрөү буйынса эштәр башҡарыу һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың хәл итеүсе бурысы булды. Икенсе юлдарҙы, күперҙәрҙе, станцияларҙы һәм узелдарҙы аяҡҡа баҫтырыу буйынса биш йыллыҡ йылдарында башҡарылған эштәр төп юнәлештәге тимер юлдарҙың йөктәрҙе үткәреү һәләтлелеген тәьмин иттеләр. Яңы серияларҙағы паровоздар, тепловоздар һәм электровоздар иҫәбенә локомотивтар паркы, шулай уҡ вагондар паркы байтаҡ яңыртылды һәм тулыландырылды. Яңы тимер юлдар, атап әйткәндә, Төньяҡта һәм Урта Азия райондарында яңы тимер юлдар төҙөлдө. Уралда, Закавказьела һәм Кривой Рогта күп кенә тимер юл линиялары, шулай уҡ Мәскәү, Ленинград, Рига, Киев, Баку һәм Таллин тимер юл узелдарында ҡала яны участкалары электрлаштерелде. Ләкин тимер юлдарын, күперҙәр һәм вокзалдарҙы аяҡҡа баҫтырыу һәм төҙөү буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе үтәп еткерелмәне.

Йылға транспортының йөк әйләнеше 1950 йылда 1940 йылғы кимәлдән 26 процентҡа уҙып китте, ләкин биш йыллыҡ план менән билдәләнелгән кимәлгә етмәне. Волганы һәм уға ҡушылыусы йылғаларҙы, шулай уҡ Себерҙәге һәм Төньяҡтағы йылғаларҙы транспорт өсөн файҙаланыу яҡшырҙы. Буксир флотының ҡеүәттәрен файҙаланыу 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, 30 процентҡа, ә үҙе йөрөмәй торған флоттың йөк ташыуын файҙаланыу 43 процентҡа артты. Йылға флоты байтаҡ яңыртылды һәм тулыландырылды. Сталин исемендәге Аҡ диңгеҙ—Балтик каналы һәм Днепр—Буг һыу юлы, шулай уҡ йылға порттары һәм судноларҙы ремонтлау предприятиелары аяҡҡа баҫтырылды.

Диңгеҙ транспортының йөк әйләнеше 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, 65 процентҡа артты, ләкин диңгеҙҙә йөк ташыу буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе үтәп еткерелмәне. Диңгеҙ порттарын һәм судноларҙы ремонтлау заводтарын аяҡҡа баҫтырыу эштәре нигеҙҙә тамамланды. Диңгеҙ флоты министерствоһының судноларҙы ремонтлау заводтарының һәм мастерскойҙарының ҡеүәте 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа һәм судноларҙы күтәреүсе ҡоролмаларҙың һаны 1,6 тапҡырға артты.

Автомобиль транспортының йөк әйләнеше 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, 2,3 тапҡырға артты. 16 мең километр оҙонлоғонда таш түшәлгән автомобиль юлдары төҙөлдө. Мәскәү — Симферополь автомобиль магистрале эксплуатацияға индерелде. Камиллаштерелгән төҙөлгән автомобиль юлдарының селтәре биш йыллыҡ аҙағына, һуғышҡа тиклемгегә ҡарағанда, 2,5 тапҡырға артыҡ булды.

Биш йыллыҡ йылдарында **связь һәм радио** средстволары аяҡҡа баҫтырылды һәм яңы техника базаһында уларҙың артабанғы үҫеше тәьмин ителде. Телефон станцияларының ҡеүәте һуғышҡа тиклемге кимәлдән уҙып китте. Биш йыллыҡ эсендә радио тапшырыу станцияларын төҙөү планы 39 процентҡа [illegible] үтәлде. Радио ҡабул итеү селтәр[illegible] Магистраль кабелле аяҡҡа баҫтыр[illegible] һуҙыу планы биш йыл эсендә 23 [illegible]центҡа арттырып үтәлде. Авиалинияларының оҙонлоғо, 1940 йыл[illegible]ғыштырғанда, 2,3 тапҡырға артты.

Милли доход һәм Государство бюджете өлкәһендә биш йыллыҡ пландың үтәлеше

Милли доходты арттырыу буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе байтаҡ арттырып үтәлде. Биш йыллыҡ план менән милли доходтың һуғышҡа тиклемге кимәлен 38 процентҡа уҙып китеү бурысы ҡуйылғайны. Фактик алғанда, милли доход 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, сағыштырмаса хаҡтарҙа 64 процентҡа артты. Милли доходтың үҫеүе эшселәрҙең, крәҫтиәндәрҙең һәм интеллигенцияның материаль хәлен байтаҡ яҡшыртырға, халыҡ хужалығына ҙур капиталь һалымдар яһауҙы тормошҡа ашырырға һәм государствоның кәрәкле материаль һәм аҙыҡ-түлек резервтарын туплауға мөмкинлек бирҙе.

Капиталистик илдәрҙә милли доходтың артыҡһынан күберәге капиталистар синыфы тарафынан үҙләштерелгән бер ваҡытта, Советтар Союзында бөтә милли доход хеҙмәтсәндәргә булып тора. Шул уҡ ваҡытта СССР хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең шәхси материаль һәм культура талаптарын ҡәнәғәтләндереү өсөн 1950 йылда милли доходтың 74 процентен алдылар, ә милли доходтың ҡалған 26 проценте социалистик производствоны киңәйтеү һәм башҡа дөйөм государство һәм общественный ихтыяждар өсөн государство, колхоздар һәм кооператив ойошмалар ҡарамағында ҡалды.

Милли доходтың үҫеүе һөҙөмтәһендә **Государство бюджетенда** йылдан-йылға расходтарға ҡарағанда доходтар артыҡ итеп үтәлде. Государство бюджетенең [illegible]ходтарында халыҡ хужалығын һәм [illegible] культура төҙөләшен финансированиеға расходтар өлөшө тайпылышһыҙ [illegible]рәлә барҙы.

Милли доходтың үҫеүе һәм [illegible]ство бюджетен уңышлы үтәү һөҙөмтә[illegible] халыҡ хужалығына капитал һалым[illegible]йынса биш йыллыҡ план 22 [illegible] арттырып үтәлде. 1946 — 1950 [illegible]дарҙа, государствоның, кооператив[illegible] һәм колхоздарҙың ваҡ предприятие[illegible] иҫәпләмәгәндә, 6000-дән артығыраҡ [illegible]мышленность предприятиеһы аяҡҡа [illegible]тырылды, төҙөлдө һәм хәрәкәткә [illegible]релде.

Шул уҡ сәбәптәр 1947 йылдың [illegible]ендә аҡса реформаһын үткәреп[illegible] бөтә аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына карточка системаһын [illegible]рергә мөмкинлек бирҙе. 1947 — [illegible] йылдарҙа массовый ҡулланыу тауар[illegible]на хаҡтар өс тапҡыр арзанайт[illegible] һәм 1951 йылдың 1 мартында [illegible] хаҡтарҙы иңынан арзанайтыу өсөн [illegible]тар әҙерләнде. Был, эшселәрҙең, [illegible]кәрҙәрҙең һәм интеллигенцияның [illegible] эш хаҡын серьез күтәреүҙе һәм ар[illegible]найтылған промышленность тауар[illegible] һатып алыуға крәҫтиәндәрҙең расход[illegible]рын кәметеүҙе тәьмин итте һәм [illegible] тағы ла күберәк нығытыуға, уның [illegible] тын алыу һәләтлеген күтәреүгә һәм [illegible] ил валюталарына ҡарата совет [illegible] курсын яҡшыртыуға килтерҙе.

Халыҡ тормошоноң материаль һәм культура кимәлен күтәреү өлкәһендә биш йыллыҡ пландың үтәлеше

Советтар Союзында эшһеҙлек булманы һәм юҡ. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғас, Совет Армияһынан һәм Хәрби-Диңгеҙ флотынан демобилизовать ителгән бөтә воиндар уларҙың квалификацияларына һәм специальностарына ярашлы рәүештә эш менән тулыһынса тәьмин ителделәр. СССР халыҡ хужалығында **эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр һаны** 1950 йыл аҙағына 39 миллион 200 мең кешене тәшкил итте һәм 1940 йылдың аҙағында булған һан менән сағыштырғанда, 7 миллион 700 мең кешегә артығыраҡ булды.

СССР халҡының материаль хәле яҡшырҙы, был эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең аҡса һәм реаль эш хаҡының үҫеүендә һәм общественный колхоз хужалығынан булһын, шулай уҡ усадьба яны һәм шәхси хужалыҡтан крәҫтиәндәр доходының артыуында үҙенең күҙәленешен тапты. **Эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр доходтарының һәм крәҫтиәндәр доходтарының** дөйөм суммаһы 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, сағыштырмаса хаҡтарҙа 62 процентҡа артты.

Хеҙмәтсәндәрҙе культура көн-күреш яғынан хеҙмәтләндереүгә государство расходтары байтаҡ артты. Халыҡ государство иҫәбенә пособиелар һәм эшселәрҙең, хеҙмәткәрҙәрҙең социаль страхованиеһе буйынса түләүҙәр, социаль-тәьминәт буйынса пенсиялар, санаторийҙарға, ял йорттарына һәм балалар учреждениеларына түләүһеҙ һәм льгота хаҡтары менән путевкалар, күп балалы һәм яңғыҙ әсәләргә пособиелар, түләүһеҙ медицина ярҙамы, түләүһеҙ уҡыу һәм государство иҫәбенә хеҙмәтсәндәрҙең квалификацияһын күтәреү, уҡыусыларға стипендиялар түләү һәм башҡа күп кенә түләүҙәр һәм льготалар алды. Унан ары, бөтә эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр йыл һайын эш хаҡының һаҡланыуы менән кәм тигәндә ике аҙналыҡ отпуск, ә күп кенә профессияларҙың работниктары тағы ла оҙағыраҡ ваҡытҡа отпуск алдылар. 1950 йылда халыҡ государство иҫәбенә юғарыла әйтелгән түләүҙәрҙе һәм льготаларҙы 120 миллиард һумдан артығыраҡ суммала, йәғни 1940 йылға ҡарағанда, өс тапҡырға күберәк суммала алды.

Халыҡтың материаль хәлен күтәреү менән бер үк ваҡытта һуғыштан һуңғы осорҙа **культураның, фәндең һәм искусствоның** артабан сәскә атыуына өлгәшелде.

Башланғыс, ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәрҙә, техникумдарҙа һәм башҡа урта уҡыу йорттарында уҡыусылар һаны биш йыл эсендә 8 миллионға артты һәм 1950 йылда 37 миллионға етте. Шул уҡ ваҡытта техникумдарҙа һәм башҡа урта махсус уҡыу йорттарында 1950 йылда 1 миллион 298 мең кеше уҡыны, ә 1940 йылда 975 мең кеше генә уҡығайны. Юғары уҡыу йорттарында 1950 йылда 1 миллион 247 мең студент уҡыны, ә 1940 йылда 812 мең кеше генә уҡығайны.

Халыҡ хужалығы биш йыл эсендә юғары белемле 652 мең специалист һәм урта белемле 1 миллион 278 мең специалист алды. 1940 йылға сағыштырғанда, халыҡ хужалығында эшләүсе специалистар һаны 84 процентҡа артты.

Үткән биш йыллыҡта беҙҙең илебеҙҙә фән һәм техниканың төрлө тармаҡтарында бик күп асыштар һәм уйлап табыуҙар яһалды. Биш йыллыҡтар эсендә [illegible] техника, әҙәбиәт һәм искусство [illegible] күренекле эштәр, уйлап табыуҙар [illegible] өлгәшеүҙәр өсөн алты мең ярымдан [illegible]ыраҡ кешегә Сталин премияһы [illegible]аты исеме бирелде. Ғилми-тикшеренеү [illegible]реждениеларының селтәре 1950 йылда [illegible]ғышҡа тиклемге кимәлдән 1,5 тапҡырға артығыраҡ булды, ә уларҙа [illegible] ғилми работниктар һаны 2 тапҡырға әйтерлек артты.

Культура-ағартыу учреждениеларының [illegible]тәре аяҡҡа баҫтырылды һәм һуғышҡа тиклемге кимәлдән уҙып китте. 1950 йылда ҡалала һәм ауылда [illegible] массовый библиотекалар һаны, 1940 йылға ҡарағанда, 15 процентҡа артығыраҡ булды. Илдә китаптар тиражы, 1940 йылға сағыштырғанда, 84 процентҡа артты. Киноустановкалар һаны 1950 йыл аҙағына, 1940 йылға сағыштырғанда, [illegible] тапҡырға артты.

Һуғыштан һуңғы осорҙа халыҡты [illegible]лау һәм санаторий-профилактик хеҙмәтләндереүҙе артабан яҡшыртыуға өлгәшелде. Ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа больница[illegible] палаталары койкалар һаны 1950 йылда 1940 йылға сағыштырғанда, 25 процентҡа артты. Һуғыш ваҡытында емерелгән санаторийҙар аяҡҡа баҫтырылды. Врачтар һаны, 1940 йылға сағыштырғанда, 75 процентҡа артты.

Совет сауҙаһын үҫтереү эшендә ҙур уңыштарға өлгәшелде. Государство һәм кооператив сауҙаһының ваҡлап һатыу тауар әйләнеше һуғышҡа тиклемге 1940 йылғы кимәлдән байтаҡ уҙып китте. 1950 йылда государство һәм кооператив магазиндарында, урындағы ресурстар иҫәбенә һатылған тауарҙарҙы иҫәпләмәйенсә, 1940 йылға ҡарағанда, ит һәм ит продукттары 38 процентҡа, балыҡ продукттары 51 процентҡа, мал майы [illegible] процентҡа, үҫемлек майы һәм башҡа майҙар 67 процентҡа, шәкәр 33 процентҡа, кондитер изделиелары 34 процентҡа, аяҡ кейемдәре 39 процентҡа, киже-мамыҡ, йөн, ебәк һәм етен туҡымалары [illegible] процентҡа, ойоҡ-ойоҡбаш изделиелары [illegible] процентҡа артығыраҡ һатылды. Культура һәм хужалыҡ кәрәк-яраҡ тауарҙары халыҡҡа һатыу артты. 1950 йылда һуғышҡа тиклемге 1940 йылға ҡарағанда, сәғәттәр 3,3 тапҡырға, радиоприемниктар 6 тапҡырға, көн-күреш өсөн булған электр приборҙары 1,5 тапҡырға, велосипедтар 2,9 тапҡырға, тегеү машиналары 3 тапҡырға тиерлек, мотоциклдар 16 тапҡырға артығыраҡ һатылды, ауылда төҙөлөш материалдары һатыу бер нисә тапҡырға артты.

Колхоз сауҙаһының күләме 1950 йылда, 1940 йылға сағыштырғанда, [illegible] артты. Карточкаларҙы бөтөргәндән һәм аҡса реформаһын үткәргәндән [illegible] осорҙа колхоз баҙарында хаҡтар [illegible]найҙы.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ [illegible]дарында **торлаҡ төҙөлөшө** киң йәйелдерелде. Государство предприятиелары, учреждениелар, һәм урындағы Советтар, шулай уҡ государство кредите ярҙамында ҡала һәм эшселәр посёлкалары халҡы тарафынан 100 миллион квадрат метрҙан артығыраҡ дөйөм майҙанлы торлаҡ йорттары һалынды һәм аяҡҡа баҫтырылды. Бынан тыш, ауылдарҙа 2 миллион [illegible] мең торлаҡ йорт аяҡҡа баҫтырылды һәм һалынды.

СССР-ҙың Государство план комитеты
СССР-ҙың Үҙәк Статистика Управлениеһе.

16 апрель 1951 йыл.

ЛЕКЦИЯЛАРҘЫҢ СИФАТЫН ЯҠШЫРТАЙЫҠ!

Культура-ағартыу эшенең төрлө формалары араһында лекция пропагандаһы ҙур урын алып тора. Ул хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләү һәм кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтарын бөтөрөү эшенә, массаның ижади энтузиазмын промышленносте һәм ауыл хужалығын күтәреү буйынса конкрет бурыстарҙы үтәүгә мобилизациялау маҡсатына уңышлы хеҙмәт итә.

Һәр икенсе йыл һайын культура-ағартыу учреждениеларына лекция эше буйынса йыллыҡ план — задание бирелгән. Шул буйынса ай һайын район культура йорттарында дүрт лекция, ауыл лекторийҙарында — 3, ауыл клубтарында һәм ҡыҙыл почмаҡтарында 2 лекция, һәр бер производство бригадаһында, колхозда, совхозда һәм МТС-та бер лекция уҡылырға тейеш.

Был задание культура-ағартыу учреждениеларына ғына бирелә һәм был лекциялар Комитет тарафынан расланған тематика буйынса һәм район, ҡала бүлектәренең путевкаһы буйынса ғына уҡылырға тейеш.

Лекция эшен йәйелдереү өсөн ҙур мөмкинлектәр бар. Дөйөм әҙәбиәттән, лекция стенограммаларынан тыш, бөтә район библиотекаларында ла лекторҙар фонды булдырылған, уларҙа методик әҙәбиәт һәм күргәҙмә пособиелар туплана.

1950 йылда культура-ағартыу учреждениеларының лекторҙары тарафынан бөтәһе 52 мең 538 лекция, шулар эсенән фәнни-тәбиғи темаларға — 14248, ауыл хужалығы темаларына — 11791, общественный-политик темаларға — 12148, медицина мәсьәләләре буйынса 3510 лекция уҡылды.

Был һандар лекция эшенең байтаҡ үҫеш алыуы тураһында һөйләйҙәр. Шул уҡ ваҡытта улар республика буйынса лекциялар уҡыу планының үтәлмәүен күрһәтәләр. Айырыуса ауыл хужалығы, медицина мәсьәләләре буйынса лекциялар уҡыу ҡәнәғәтләнерлек түгел. Лекциялар уҡыу эшен Бәләбәй, Бишбүләк, Борай, Ғафури, Стәрлетамаҡ, Бөрө, Салауат, Кушнаренко районларының культура-ағартыу учреждениелары уңышһыҙ алып баралар.

Райондарҙағы лекторҙар группаларында һәм лекторҙарҙың ауылдарҙағы берекмәләрендә 4 меңдән артыҡ кеше лекциялар уҡыуҙа ҡатнаша. Улар араһында уҡытыусылар, врачтар, агрономдар, зоотехниктар, ветеринар врачтар, етәксе партия, совет һәм хужалыҡ работниктары бар.

Культура-ағартыу учреждениелары тарафынан алып барылған лекция пропагандаһында серьёз етешһеҙлектәр бар. Күпселек райондарҙа лекторҙар менән эш алып барылмай, лекторҙар группалары һәм лекторҙарҙың ауылдарҙағы берекмәләре үҙ-ара ярҙам ойоштороусы ижади коллективтар булып тормайҙар. Методика секциялары эшләмәй. Улар лектор тарафынан төҙөлгән һәр бер яңы лекцияның конспектын тикшереп расламайҙар. Тап бына шуға күрә лә күп лекциялар түбән кимәлдә була.

СССР Министрҙар Советы «Фән ҡаҙаныштарын һәм алдынғы тәжрибәне пропагандалау һәм ауыл хужалығына индереү тураһында» ҡарар ҡабул иткәйне. Был йәһәттән дә ҙур етешһеҙлектәр бар. Лекторҙар араһында ауыл хужалығы специалистарының ни бары 668 генә кеше булыуы быны асыҡ күрһәтә. Лекциялар уҡыуға Абзан, Благовещен, Бо-[illegible], Борай, Дүртөйлә, Ҡаныға, Нуриман, Бөрлә, Белорет, Бөрйән районларында 42 генә агроном йәлеп ителгән. Ә [illegible]ҡырсын, Ермәкәй, Ылайыр, Күгәрсен, [illegible]ровка, Салауат районларында агрономдар һәм зоотехниктар лекциялар уҡыуҙа бөтөнләй ҡатнашмайҙар.

Ауыл хужалығы темаларына лекциялар уҡыу һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Мәҫәлән, Бәләбәй районында ауыл хужалығы темаларына ни бары 260 лекция уҡылған. Был, бер йыл эсендә һәр бер колхозда бары тик 5-6 лекция уҡылған, тигән һүҙ. Ә һәр бер ауылға берәр лекция ғына тура килә. План буйынса һәр бер ауылда айға бер лекция уҡылырға тейеш ине.

Асҡын, Баймаҡ, Дәүләкән, Краснокама, Мәсетле, Хәйбулла районларында ни бары йөҙәр лекция уҡылған. Был йылға һәр бер колхозға 2-3 лекция тәшкил итә. Белорет, Благовещен, Бөрйән районларында эш тағы ла насарыраҡ тора.

Лекция пропагандаһындағы был серьёз етешһеҙлектәрҙе һис кисекмәҫтән бөтөрергә, уҡылған лекцияларҙың идея-теоретик кимәлен хәҙерге заман совет фәне, техникаһы һәм культураһы кимәленә күтәрергә кәрәк.

Һәр бер лекцияны культураһыҙлыҡҡа, ҡуҙ-барға ышаныуҙарға, һәр төрлө хорафаттарға ҡаршы йүнәлтергә кәрәк. Беҙҙең лекцияларыбыҙ промышленноста производство пландарын срогынан алда һәм арттырып үтәүгә, юғары һәм тотороҡло урожайҙар алыуға өлгәшеүгә, колхоз һәм совхоз малсылығының һанын арттырыуға һәм продукт биреүсәнлеген күтәреүгә рухландырырға тейештәр.

Беҙ техника, фән, экономика, культура өлкәһендәге ҡаҙаныштар, социалистик системаның капиталистик системаға ҡарағанда өҫтөнлектәре, тыныслыҡ, демократия һәм социализм өсөн көрәштәге бөйөк ваҡиғалар һәм был эштә тыныслыҡ һәм прогрестың таяныcы булған СССР-ҙың роле тураһында ябай һәм аңлайышлы итеп һөйләргә тейешбеҙ.

В. И. Лениндең тәрән аҡыллы күрһәтмәләрен онотторға ярамай. «Һәр төрлө мәктәптә иң мөһиме — лекцияларҙың идея-политик йүнәлеше ул, — тине Ленин. — Был йүнәлеш нимә менән билдәләнә? Тулыһынса һәм бары тик лекторҙар составы менән».

Был, лекторҙар кадрҙарын һайлап алыуға серьёз иғтибар биреү менән бергә, лекторҙарҙың теоретик кимәлдәрен һәм лекторлыҡ оҫталыҡтарын күтәреү тураһында даими хәстәрлек күрергә кәрәк, тигән һүҙ.

Ғилми-ағартыу пропагандаһы үткән замандың мираҫына ҡаршы көрәшеүҙең, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләү эшендә яңы ҡаҙаныштарға мобилизациялауҙың мөһим средствоһы булып тора. Шуға күрә беҙҙең пропагандабыҙ боевой, маҡсатҡа йүнәлешле, аңлайышлы, конкрет һәм фәнни яҡтан тотанаҡлы, фән һәм техника үҫешенең хәҙерге кимәленә яраҡлы булырға һәм тыңлаусыларға теләгән бер бурысты дөрөҫ аңлауға һәм хәл итеүгә ярҙам итергә тейеш.

Был бурысты лектор ғына хәл итә, ул «массаға Ленин — Сталиндең бөйөк идеяларын алып барыуға, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙә партияға ярҙам итеүгә саҡырылған. Лектор идеологик эштең алдынғы участкаһында тора, ул — политик белемде күтәреүҙә, идея яғынан үҫеүҙә коммунистарҙың иң яҡын ярҙамсыһы» («Правда» газетаһының 1950 йыл 24 июлдәге баш мәҡәләһенән).

Лекция пропагандаһының культура-ағартыу эшендә мөһим участка булып тороуын һәм уның урындағы партия һәм совет ойошмаларының даими иғтибарын талап итеүен аңларға кәрәк.

Райондарҙағы лекторҙар группаларын, лекторҙарҙың ауылдарҙағы берекмәләрен ижади коллективтарға әүерелдереү, методик секцияларҙың систематик эшләүҙәрен тәьмин итеү, уларҙың ултырыштарында һәр бер яңы лекцияның текстын тикшереүҙе һәм раҫлауҙы ойоштороу талап ителә.

Райондарҙағы лекторҙар группаларының, секцияларҙың һәм ауылдарҙағы лекторҙар берекмәләренең етәкселәре урындағы партия ойошмаларының ярҙамында бөтә коллективтың эшен, лекция пропагандаһының кимәлен хәҙерге талаптар юғарылығына күтәреүҙе тәьмин итергә бурыслылар. Һәр бер лекторҙың ижади үҫеүенә ярҙам итергә кәрәк. Ә был — лекцияларҙың сифатын күтәреүҙә иң мөһим шарт.

Ғ. Алтай.

Хеҙмәттә яңы уңыштар

Электр оборудованиелары заводы коллективының май алды ярышына ҡушылыу тураһындағы мөрәжәғәте Өфө «Швейпотреб» фабрикаһында ҙур хуплау тапты. Уға яуап итеп, коллектив дүрт айлыҡ производство планын 25 апрелгә үтәргә, хеҙмәт етештереүсәнлеген, планға ҡарағанда, 5 процентҡа күтәрергә һәм 400 килограмм епкә экономия яһарға йөкләмә алды.

Коллектив хәҙер үҙ йөкләмәһен үтәү өсөн икеләтелгән энергия менән эшләй. Фабрикала «Уралмашзавод» новаторҙарының башланғысы киң урын алды. Техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн инженер-техник работниктар байтаҡ эш башҡарҙылар. Бында элек катушкалағы ептәрҙе ялғау өсөн бөтә станоктарҙы туҡтатыу талап ителә ине. Цех начальнигы иптәш Зельбер бындай ҡыйын хәлдән ҡотолоу өсөн махсус ҡулайлаштырыу эшләне. Һөҙөмтәлә хеҙмәт етештереүсәнлеге 2-3 тапҡырға артты.

Р. Сафин.

Картоф орлоғон яровойлаштырыу

Өфө районы Цюрупа исемендәге совхоз картофтан юғары урожай алыуҙа республикабыҙҙа беренсе урынды алып тора. 1950 йылда 334 гектар майҙанда картоф үҫтерелеп, һәр гектарынан уртаса 1200 бот, ә айырым участкаларҙа 1350 бот картоф урожайы алды. Совхоз үткән йыл государствоға картоф тапшырыу заданиеһын 161 процентҡа үтәне.

Быйыл совхоз тотош майҙандың һәр гектарынан 1500 бот картоф урожайы алыу өсөн көрәшә. Хәҙер «Лорх» сортлы картофтың уртаса эрелектә булғандары орлоҡ өсөн һайланып, яровойлаштырырға һалынды.

Ә. Әхтәмов.

Малсылыҡ алдынғылары

Ҡыйғы. Сталин исемендәге колхоздың һыйыр һауыусыһы Ғәйсина Мәслимә фермала ун йыл буйы өҙлөкһөҙ эшләп килә. Ул үткән йылда 10 һыйырҙан 10 быҙау алып үҫтерҙе. 1949 йылға ҡарағанда, һөттө 400 литрға артыҡ һауып алды. Баймөхәмәтова 28 быҙау тәрбиәләне. Сусҡалар ҡараусы Знакаева һәр бер сусҡанан 15-әр сусҡа балаһы алып үҫтерҙе.

Колхоз правлениеһы Ғәйсинаны намыҫлы хеҙмәттәре өсөн өҫтәмә түләү тәртибендә бер һарыҡ һәм сусҡа балаһы менән, Баймөхәмәтованы бер быҙау менән бүләкләне, Знакаеваға яңы өй һалдырып бирҙе.

З. Вәлиев.

Колхоз яҡшы орлоҡтар ғына сәсәсәк

Ҡандра районы Молотов исемендәге ауыл хужалығы артеле членары ҡышҡы агротехник саралар планын уңышлы үтәгәйнеләр.

Хәҙер колхозсылар юғары урожай өсөн көрәште дауам итеп, 200 гектар майҙанда ҡар һыуҙарын тоттолар. 100 гектарҙан артыҡ уржымды өҫтәмә азыҡландырҙылар. Баҫыу эштәрендә Ильясов һәм Насибуллин иптәштәр етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадалары членары айырыуса актив ҡатнашалар.

Колхоз быйыл орлоҡ участкаларына яровойлаштырылған һәм ағыуланған орлоҡтар ғына сәсәсәк. Был эш тә тамамланып килә инде. 220 центнер бойҙай, 46 центнер һоло орлоҡтарын ағыулау үткәрелде, 114 центнер картоф яровойлаштырырға һалынды.

М. Сәләхов.

ВОСКРЕСНИК УҘҒАРЫЛДЫ

Красноусол. Ташлы ауылында ата-әсәләр мәктәпкә утын әҙерләү буйынса воскресник уҙғарҙылар. Воскресникта 50-нән артыҡ кеше ҡатнашып, яңы уҡыу йылына 72 кубометр утын әҙерләне.

И. Ғәлиев.

ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ

БАШҠОРТОСТАН НЕФТСЕЛӘРЕ ТУРАҺЫНДА ТӘҮГЕ РОМАН

Беҙҙең совет әҙәбиәтендә социалистик индустрия, эшселәр синыфы темаһы үҙәк урындарҙың береһен ала бара. Был бик тәбиғи һәм законлы, сөнки яҙыусыларға, искусство деятелдәренә совет халҡының ижади хеҙмәтен юғары идеялы һәм художестволы итеп ҡаүҙаландырыу өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған.

Кирәй Мәргән башҡорт совет прозаһы һәм драматургияһы өлкәһендә айырата актив эшләүсе яҙыусыларҙың береһе. Ул Бөйөк Ватан һуғышынан һуң совет уҡыусыларын үҙенең нефть ҡалаһы Октябрьский һәм уның кешеләре тураһындағы «Ҡала иртәһе» пьесаһы менән шатландырғайны. К. Мәргәндең «Нарыш-тау итәгендә» тигән романы яҙыусының үҙе өсөн дә, дөйөм башҡорт совет әҙәбиәте өсөн дә ҙур өлгәшеү булып тора.

Яҙыусы «Нарыш-тау итәгендә» тигән һуңғы әҫәрен, Башҡортостандағы нефть промышленносен, атап әйткәндә, Туймазы нефтселәренең коммунистик общество төҙөүгә йүнәлтелгән ижади хеҙмәттәрен, стахановсы эш методтарын, большевиктарҙың производствоҙағы етәкселек ролен ҡаүҙаландырыуға арнаған.

Романдың сюжет йөкмәткеһе бай. Сюжет йөкмәткеһенең тәрән һәм йыйнаҡлығы, композицион төҙөк булыуы—социалистик общество кешеләренең типик хәл һәм шарттарҙа күрһәтелеүендә. Башҡортостан нефть промышленносе батырҙарының, нефть патриоттарының бөгөнгө һәм киләсәктәге бәхет өсөн көрәштәрен ысын мөхәббәт, тәрән йылылыҡ менән ҡаүҙаландырыуҙа асыҡ күренә. Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы сталинса биш йыллыҡты үтәү өсөн фиҙакәр хеҙмәттә актив ҡатнашыусы кешеләр романдың төп геройҙарын тәшкил итәләр. Әҫәрҙә автор тарафынан үткәрелгән нигеҙ идея иң бөйөк маҡсатҡа — Ленин — Сталин партияһының аҡыллы етәкселегендә хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәттең тыуыуын, совет кешеләренең социалистик обществоның юғары стадияһы булған коммунизмға күсеү өсөн көрәштәрен киң күләмдә һүрәтләүгә ҡайтып ҡала.

Романда күрһәтелгәнсә, Совет Башҡортостанындағы яңы эшселәр синыфы һәм уның етәкселәре алдында илдең нервыһын, ҡеүәтен тәҙәгән нефть промышленносен механизациялаштырыу, хеҙмәт эшен—дан эше, намыҫ эшенә әйләндереү, аҡыл эше менән физик-хеҙмәт эшенең органик ҡушылыуы төп урында тора.

Романдың авторы, К. Мәргән совет кешеләренең характерын ижади хеҙмәт процесында, уларҙың иҫкелеккә, консерватизмға ҡаршы ныҡ көрәштә туҡтауһыҙ үҫеүҙәрен тәрән йылылыҡ менән тасуирлай. Нарыш ауылынан сыҡҡан тәүге нефть фонтаны атылыуҙың йәнле шаһите булған Сөләймән ҡарттан башлап, сталинсе осор тоҡомо Сәлмән, Мөрат, Мәрйәм, Люся, Әсия, Баязит һәм башҡалар романда коммунизм ҡояшын балҡытыусы ижади хеҙмәт кешеләре итеп биреләләр. Шул ябай совет кешеләренең һоҡландырғыс ижади хеҙмәте һөҙөмтәһендә ваҡ тәҙрәле, тоҡта түбәле, ҡасандыр мөнәйып ятҡан Нарыш ауылы бөтөнләй танымаҫлыҡ булып үҙгәрә, коммунизмдең мәңге һүнмәҫ маяғы булып Октябрьский ҡалаһы майҙанға ҡалҡып сыға.

Нефть бораулау эшен фән, техника ярҙамында тағы ла тиҙләтеү, иҫке бораулау методынан трубобурға күсеү өсөн көрәш, Башҡортостан нефтселәре менән Баку нефтселәре араһында барған социалистик ярыш һөҙөмтәһендә стахановсылар хәрәкәтенең киң йәйелеп китеүе, большевиктар партияһының аҡыллы етәкселеге, туҡтауһыҙ хәстәрлеге менән рухланған Октябрьский нефтселәренең юғары производство күрһәткестәр биреүҙәре—роман йөкмәткеһенең иң мөһим йүнәлеш нөктәһе булып торалар.

«Дөйөм нефте өсөн көрәш оҙаҡ дауам итте. Ҡайһы бер шикләнеп ҡараусы кешеләр ул башланғысҡа ышанмау белдереп, Ярцев менән Сөләймән ағайҙы юҡ артынан йөрөүҙә ғәйепләнеләр. Хатта ҡайһы бер етәкселәр ҙә, инженерҙар ҙа

ҡаршы төштөләр. Техник кәңәшмәләрҙә улар эшләгән буровойҙы йыҙырға кәрәк, тигән сығыш яһаусылар ҙа булдылар. Ләкин, Ярцев, Лебедев һәм Сөләймән ағай бирешмәнеләр, үҙ һүҙҙәрендә ныҡ торҙолар. Нефтселәрҙең дә күпселеге улар яғында булды» ти автор. Романда хәрәкәт итеүсе төп геройҙар булған талантлы инженер һәм бораулау контораһы парторгы Савелий Ярцев, нефть бораулау эшенең атаҡлы мастеры Павел Лебедев, контора директоры Назарғолов, партияның район комитеты секретары Байрамов һәм башҡалар промыслалағы алдынғы кешеләр менән берлектә, юғары производство күрһәткестәре өсөн, иҫке эш методынан яңы методҡа күсеү, производство процесын механизациялаштырыу, стахановсылар хәрәкәтен киң йәйелдереү өсөн көрәш алып баралар; алдынғыларға тағы ла яҡшыраҡ эшләргә ярҙам итәләр, арттағыларға күтәрелеү өсөн булышалар. «...Урталыҡҡа йәшәй торған бригадалар күп. Алға ла китмәй, артҡа ла ҡалмай. Эш бер кимәлгә күтәрелгән дә, ҡатып ҡалған...» Буровой мастер Пантимер Миңнеғолов ана шундай урталыҡта барыусыларҙың береһе. Ул хеҙмәткә намыҫ, дан эше тип ҡарай, ләкин стахановсылыҡ хәрәкәтенең, социалистик ярыштың, бораулау эшен механизациялаштырыуҙың асылын төшөнөп етмәй, өйрәнелгән уңыштар менән генә ҡәнәғәтләнеп, тыныс ҡына йәшәргә теләй. Үҙ бригадаһындағы Сәлмән, Мәрйәм, Махмут һәм башҡалар кеүек һөнәрселек училищеһын тамамлап ҡайтҡан алдынғы йәштәрҙең хеҙмәт инициативаһына иғтибар итмәй, атаҡлы буровой мастер Лебедев бригадаһының ярышҡа саҡырыуын да, Сәлмән шикелле талантлы йәштәрҙең бораулау эшен тиҙләтеүгә йүнәлтелгән рационализация тәҡдимдәрен дә, үҙенең авторитетын төшөрөүгә йүнәлтелгән бер нәмә тип баһаларға тырыша. Уларҙа социалистик общество кешеләренең мораленә һыйышмай торған, мин-минлек көслө. Шуға күрә лә бурильщик Пантимер хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт, коммунистик обществола йәшәү тәртиптәре мәсьәләһендә лә дөрөҫ булмаған ҡараштар тора, «сөнки ул алдынғы тормош тураһында һүҙ сыҡҡанда, коммунизм осоронда ниндәйҙер тыныслыҡ буласағы, байлыҡ киләсәге тураһында» ғына уйлай. Романдағы төп конфликттар—бына шундай ҡараштағы кешеләргә ҡаршы көрәш, уларҙы дөрөҫ юлға баҫтырыу фонында үҫтереләләр.

Ҡарт буровой мастер Пантимер Миңнеғолов нефтселәрҙең берҙәм коллективы, Ярцев, Байрамов, Назарғолов, Лебедев кеүек производство командирҙарының йоғонтоһо арҡаһында үҙ хаталарын аңланкән тәшенә бара, алдынғылар менән бергә хәрәкәт итә башлай. Был иҫке метод менән эшләүсе, ләкин тәжрибәле мастер Миңнеғолов, нефть бораулау эшен механизациялаштырыуҙың асылын аңлай, социалистик ярышты йәйелдереү һөҙөмтәһендә, уның бригадаһы Лебедевтар бригадаһы кеүек ваҡиғаның эсендә ҡайнай башлай. Сәлмән, Махмут, Тайфур, Мәрйәм, Мөрат кеүек буровойҙа эшләүсе талантлы йәштәр әлегәсә күрелмәгән юғары производство күрһәткестәре биреүгә өлгәшәләр. Романдың финалы — иҫке эш методынан яңыға күсеү өсөн көрәш, бригада менән бригада араһында, артыҡ килеп Башҡортостан нефтселәренең Баку нефтселәре менән социалистик ярыш һөҙөмтәһендә мастер Миңнеғолов етәкселек иткән бригаданың алдынғылар сафына баҫыуы. Октябрьский нефтсе стахановсыларының юғары күрһәткестәр биреп Мәскәүгә Октябрь байрамын ҡаршыларға китеүҙәре менән тамамлана.

Әҫәрҙә нефть промышленносендағы урта, кесе һәм хатта юғары командирҙарҙың бөтә ыңғай яҡтары күрһәтелгән. Нефть промыслалары етәкселәренә хас булған мөһим черталарҙы үҙҙәренә туплаған Ярцев, Лебедев, Назарғолов, Байрамов, Юлбаев Баку нефть мастеры Черпышков, Күлиев образдары уҡыусыларҙың күңелендә оҙаҡ онотолмаҫлыҡ тәьҫир ҡалдыралар. Улар йөҙөндә беҙ социалистик обществоның талантлы, ижади хеҙмәт кешеләрен, коммунизм төҙөү эшендә иң алдынғы сафта барыусыларҙы күрәбеҙ.

Романда нефть промышленносендә эшләүсе совет йәштәренә айырыуса киң һәм почетлы урын бирелгән. Ҡасандыр, мөнәйып ятҡан Нарыш ауылынан сыҡҡан комсомолец Сәлмән Сөләймәнов, Әсия Миңнеғолова, Мәрйәм, Махмут, Мөрат, Тайфур, Баязит, Люся һәм башҡа алдынғы совет йәштәренең сифаттарын ҡаүҙаландыреуса кешеләр улар, автор, уларҙың Бөйөк Ватан һуғышынан һуң, Ишембайҙа һөнәрселек училищеһын бөтөрөп, нисек нефть бораулау техникаһын үҙләштереүҙәрен, социалистик ярышҡа еңеп сығыуҙарын, шәхси интерестарға ҡарағанда, общественный интерестарҙы өҫтөн ҡуйыуҙарын, үҙ-ара дуҫтарса, иптәштәрсә мөнәсәбәттәрен тәрән йылылыҡ менән күрһәтә алыуға ирешкән. Уларҙағы был черталар хеҙмәт процесында ла, производство кәңәшмәләрендә лә, летучкаларҙа ла, семьяла ла, мөхәббәттә лә, Баку нефтселәрен ҡаршылауҙа ла, стахановсыларҙың слетында ла бик асыҡ күренеп торалар.

Беҙҙең башҡорт совет прозаһында әлегә тиклем романдың булмауын хәтергә алғанда, К. Мәргәндең «Нарыш-тау итәгендә» романы жанр булыу яғынан бик әһәмиәтле бер фактор. Әгәр ҙә яҙыусының быға тиклем баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәрендә, бигерәк тә повестарында, сюжет һәм композиция ҡоролошонда, ваҡиғаларҙы күрһәтеүгә йомшаҡлыҡ, тура һыҙыҡлыҡ менән хикәйәләп сығыу һымаҡ етешһеҙлектәр күҙгә ташланған булһа, «Нарыш-тау итәгендә» романында яҙыусы был кәмселектәрҙән арынырға тырышҡан. Әҫәрҙә роман формаһына хас булған бөтә сифаттар бар.

Был совет ысынбарлығының айырата мөһим темаһын сағылдырған әҫәрҙә кәмселектәр ҙә юҡ түгел. Был кәмселек бигерәк тә автор теленең, ҡайһы бер осрактарҙа, ҡытырышлы булыуы, очерк характерын алып китеүендә, грамматик төҙөлөш яғынан зәғиф һөйләм һәм диалогтарҙа күренә. Авторҙың ваҡиғалар һәм кешеләр тураһында күберәк үҙе һөйләүе, бер үк нәмәләрҙе ҡабатлауы, персонаждар диалогының ҡолайлы ҡуйылған булмауы, ғөмүмән һүҙгә «йомартлыҡ» былар бөтәһе лә әҫәрҙәге ҙур кәмселектәр булып торалар. Яҙыусы әҫәрҙең киләсәк баҫмаларында быға ныҡ иғтибар итергә тейеш.

Жан Лоҡман.

Колхозда производство бригадаһы

Колхозсыларҙың хеҙмәтен дөрөҫ ойоштороу колхозды ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуҙа ҙур роль уйнай. СССР Министрҙар Советы «**Колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороу эшендә даими производство бригадаларын һәр яҡлап нығытыу, артель хеҙмәтен ойоштороуҙың төп формаһы булыу яғынан мөһим бурыс булып тора, тип иҫәпләргә**», тип күрһәтте.

Тракторҙарҙы һәм ҡатмарлы машиналарҙы уңышлы файҙаланыу өсөн колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороу мәсьәләләрен МТС-тар техникаһына ҡарап ойошторорға кәрәк. МТС-тарҙағы хәҙерге машина техникаһы колхоздарҙа ҙур ер участкалары һәм эшсе көстәре күп булған производство берәмектәре күренешендә хеҙмәтте ойоштороуҙарға тейешле булыуын талап итә. Колхоздарҙа был талапҡа даими производство бригадалары яуап биреп тора. Бәртәкле культуралар үҫтереүҙә звенолар төҙөү хәҙерге машина техникаһын файҙаланыуға яуап бирмәй. Бәртәкле культураларҙы үҫтереү звеноларын бөтөрөү һәм баҫыусылыҡ бригадаларын нығытыу трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларының тығыҙ бәйләнештә эшләүҙәрен яҡшыртыу, машиналарҙың юғары етештереүсәнлектә эшләүен тәьмин итә.

Даими производство бригадаһында, бер үк ваҡытта, хеҙмәтте ойоштороуҙың ярҙамсы формалары ла ҡулланылырға мөмкин. Пропаш һәм техник культураларҙы үҫтереүҙә төп эштәрҙе механизация кимәле әлегә түбән булып тора. Был культураларҙы үҫтереү буйынса бригадала звенолар булдырыла. Ләкин хеҙмәтте ойоштороуҙың был формаһын файҙаланыу звеноларҙың ярҙамсы әһәмиәт тотоуын күрһәтә. Хәҙерге ваҡытта шәкәр сөгөлдөрө, күк һағыҙ, йәшелсә һәм башҡа пропаш культураларын үҫтереү буйынса бригада составында ойошторола торған звеноларҙың эшен нығытырға кәрәк. Даими производство бригадаһы ерҙе һәм производство ҡоралдарын файҙаланыуҙа әйәһеҙлекте бөтөрә һәм һәр бер колхозсының үҙенә тапшырылған эшкә яуаплылығын урынлаштыра, индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщинаны ҡулланырға мөмкинлек бирә. Шуға күрә күпселек колхоздарҙа ауыл хужалығы артелдәрен эреләтеү менән бер үк ваҡытта, даими баҫыусылыҡ бригадаларын эреләтеү һәм нығытыу эше алып барыла. Был, производство бригадаһын, хеҙмәтте ойоштороуҙың төп формаһы булыу яғынан, үҙ ваҡытында нығытты.

Бәҙәлы районында колхоздарҙы берләштереүгә тиклем осорҙа 239 бригада бар ине. Ә хәҙер, колхоздарҙы эреләтеүҙән һуң, бында 115 баҫыусылыҡ бригадаһы бар. Бүздәк районында колхоздарҙы эреләтеүгә тиклем 157 бригада булһа, хәҙер 83 бригада бар. Бөтә был бригадаларға ер участкалары беркетелгән. Бригадаларға беркетелгән колхозсылар составы, йәнле тартыу көсө һәм производство ҡоралдары яңынан ҡаралған. Эшкә һәләтле, иң алдынғы колхозсылар бригадирҙар итеп ҡуйылғандар. Шулар һөҙөмтәһендә был колхоздарҙа ерҙе файҙаланыу тәртибен боҙоу бөтөрөлгән, хеҙмәт дисциплинаһы яҡшырған.

Шулай ҙа, урындарҙа күп кенә колхоздарҙың етәкселәре, партия, совет ойошмалары һәм ауыл хужалығы органдары даими баҫыусылыҡ бригадаларының эштәрен нығытыуға етерлек тиклем әһәмиәт бирмәйҙәр, бригадаларҙың колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуҙағы ролен баһалап еткермәйҙәр.

Байтаҡ колхоздарҙа бригадаларға ер участкаларын, эшкә яраҡлы колхозсыларҙы һәм производство ҡоралдарын бүлеү дөрөҫ үткәрелмәгән. Был, эшсе һәм йәнле тартыу көстәрен һәм производство ҡоралдарын бер бригаданан икенсе бригадаға күсереүгә мәжбүр итәсәк. Тимәк, был, әйәһеҙлеккә алып барасаҡ.

Ҡайһы бер колхоздарҙа бригадалар составында ағымсылыҡҡа юл ҡуйыла. Бригадирҙан рөхсәт алып тормайынса, уның бригадаһындағы колхозсылар башҡа бригадаға күсерелә. Шулай уҡ сәсеү әйләнештәре баҫыуҙарының һәм бригада участкаларының сиктәрен боҙоу ваҡиғалары бар. Баҫыусылыҡ бригадаларының ер участкаларының даими булмауы агротехника сараларының комплексын тулыһынса үткәреүгә ҡамасаулай. Улар баҫыулы сәсеү әйләнештәрен үҙләштереүҙе оҙаҡҡа һуҙа. Баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙарҙы алмашынған ваҡытта уға беркетелгән сәсеүлектәр, баҫыу һаҡлаусы урман полосалары, йәнле тартыу көстәре, эш ҡоралдары һәм башҡалар тикшерелмәйҙәр, ҡабул итеү һәм тапшырыу документтары төҙөлмәй.

Хеҙмәтте ойоштороуҙағы серьёз етешһеҙлектәрҙең береһе—бригадала колхозсыларға эштең дөрөҫ бирелмәүендә тора. Бында колхозсының эшкә һәләтлелеге һәм уның тәжрибәлелеге иҫәпкә алынмай. Айырым колхоздарҙа бригада тарафынан урожай алыуҙы арттырып үтәү өсөн өҫтәмә түләү кеүек сараларға иғтибар бирелмәй. Оло Теләк районы колхоздарында яҡшы эшләү өсөн өҫтәмә хеҙмәт көндәре яҙыу һәм насар эшләүе өсөн хеҙмәт көндәрен һыҙып ташлау үҙ ваҡытында үткәрелмәй.

Колхоз эсендә планлаштырыу эштәренең торошо ҡәнәғәтләнерлек түгел. Производство бригадаларына заданиелар ваҡытында бирелмәй. Заданиеларҙы биреүҙә ер участкаларының үҙенсәлектәре һәм башҡа мөмкинлектәр иҫәпкә алынмай. Был етешһеҙлектәр Әбйәлил, Салауат, Стәрлебаш районларында айырыуса ҙур урын алып тора.

Республикабыҙҙың күпселек колхоздарында баҫыусылыҡ бригадалары бәләкәй күләмдә төҙөлгән. Колхоздарҙы эреләтеү айҡанлы баҫыусылыҡ бригадаларын да эреләтеү һәм нығытыу талап ителә. Был эштә Абзан, Күгәрсен, Нуриман, Федоровка, Хәйбулла районлары ҡәнәғәтләнерлек эш алып бармайҙар әле. Ҡарайҙел, Мишкә, Байҡыбаш районларында баҫыусылыҡ бригадаларын эреләтеү һәм нығытыу эштәре менән бөтөнләй шөғөлләнмәйҙәр. Эреләтелгән колхоздарҙа баҫыусылыҡ бригадаларының ваҡ булыуҙары ер участкаларын ваҡлауға һәм колхоз производствоһына етәкселек итеүҙе ҡыйынлаштырыуға алып бара. Административ-хеҙмәтләндереүсе персональ штаттарын ҡыҫҡартыу айҡанлы бушатылған колхозсыларҙы баҫыусылыҡ бригадаларына беркетеү насар үткәрелә. Колхоздарҙы эреләтеү ваҡытында административ штаттан 5993 колхозсы бушатылды. Ләкин шул иҫәптән колхозсыларҙан тик 1693 кеше генә баҫыусылыҡ бригадаһына беркетелгән. Был эш Әлшәй, Балтас, Байҡыбаш, Борай, Маҡар, Покровка районлары колхоздарында айырыуса насар алып барыла.

Эреләтелгән колхоздарҙа баҫыуҙарҙың һәм бригада участкаларының күләмдәре ҙурая. Был, уларҙа ҙур һәм ҡеүәтле баҫыусылыҡ бригадалары төҙөү мөмкинлеген тыуҙыра.

Эреләтелгән колхоздарҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу өсөн эшсе көстәрен дөрөҫ урынлаштырырға, даими производство бригадаларын төҙөргә, уларға даими бригадирҙар билдәләргә, колхозсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһын ныҡлы урынлаштырырға кәрәк.

Колхоздарҙа йыллыҡ производство заданиеларын төҙөгән ваҡытта производство бригадалары составын эреләтеү яғына табан ҡайтанан төҙөргә, хеҙмәтләндереүсе персональ составынан бушаған колхозсылар менән уларҙы тулыландырырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта производство бригадаларының трактор бригадалары менән дуҫлыҡта эшләүҙәрен тәьмин итеү мәсьәләләре ҡаралырға тейеш. Баҫыусылыҡ бригадаларына йыллыҡ производство заданиелары тапшырған ваҡытта бригада эшенең механизация кимәлен, баҫыуҙарында тупраҡ төрҙәлеген, ҡыйшайыуын, үҫтерелә торған культураларҙы һәм башҡа үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алырға кәрәк. Бригадирҙарҙы һайлап алыу производство бригадаһының уңышлы эшләүен тәьмин итеүҙең шарты булып тора. Бригадирҙар ентекле һайлап алынырға һәм уларҙың роле күтәрелергә тейеш.

Урындарҙа партия, совет ойошмалары һәм ауыл хужалығы органдары колхоздарҙағы эреләтелгән баҫыусылыҡ бригадаларын ойоштороу һәм уларҙа хеҙмәткә түләү мәсьәләләре менән ентекле шөғөлләнергә бурыслылар. Был, колхоз производствоһының ҡеүәтле яңы күтәрелешен тәьмин итер.

И. Кудаяров.

ВКП(б) Өлкә Комитетының ауыл хужалығы бүлеге мөдире урынбаҫары.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

САБЫНЛЫҠТАР ҺӘМ КӨТӨҮЛЕКТӘРҘЕҢ УРОЖАЙЛЫЛЫҒЫН КҮТӘРӘЙЕК!

Ауыл хужалығы үҫешендә үҙәк бурысты — малсылыҡты артабан күтәреү бурысын ныҡлы һәм тотороҡло аҙыҡ базаһы булдырыу менән генә хәл итергә мөмкин. Сөнки малсылыҡты үҫтереү һәм уның продуктивлеген күтәреү, мул аҙыҡ базаһы булдырыуға бәйле булып тора.

Фән һәм практика тарафынан малсылыҡҡа ныҡлы һәм тотороҡло аҙыҡ базаһы булдырыу төп ике юлдан барырға тейеш икәне иҫбат ителде: беренсенән, үлән баҫыулы сәсеү һәм мал аҙығы сәсеү әйләнештәрен ҡулланырға, икенсенән, тәбиғи сабынлыҡтарҙы яҡшыртырға кәрәк. Общественный малсылыҡты үҫтереүҙә колхоздарҙың артабанғы уңыштары үлән баҫыулы сәсеү әйләнештәрен ҡулланыуға һәм сабынлыҡтарҙы, көтөүлектәрҙе культуралы һәм рациональ файҙаланыуға бәйләнгән.

Тәбиғи сабынлыҡтарҙан алынған мал аҙыҡтары рационда ҙур урын ала. Бындай бесәнлектәр һәм көтөүлектәр күп колхоздарҙа мал аҙыҡтарының төп сығанаҡтары булып тора. Башҡортостан шарттарында малдар яҙы йыл буйы көтөүлектәрҙә йөрөтөлә, һауып алынған һөттөң 70 проценте тирәһе йәйге көтөү сезонында алына. Малдарҙы йөрөтөп һимертеү тик көтөүлектәрҙә генә үткәрелә. Ҡышҡы осорҙа бесән туйыҡ аҙыҡтарҙың төп төрө иҫәпләнә һәм унда аҡһым, минераль тоҙҙар һәм витаминдар күп була. Ләкин, сабынлыҡтар һәм көтөүлектәрҙең ҙур әһәмиәтенә ҡарамаҫтан, улар күп колхоздарҙа насар хәлдә тотолалар.

Башҡортостанда тәбиғи сабынлыҡтар һәм көтөүлектәрҙең майҙаны ҙур. Ләкин улар районлар буйынса тигеҙ бүленмәгән. Бының өҫтәүенә, уларҙың урожайлылығы ла түбән. Был — уларҙы системаһыҙ файҙаланыу, яҡшыртыу саралары күрмәү һөҙөмтәһе. Бесән балансында тәбиғи сабынлыҡтарҙың әһәмиәте ҙур булыуға ҡарамаҫтан, күп колхоздар уны яҡшыртыу менән шөғөлләнмәйҙәр.

Быны раҫлау өсөн тәбиғи бесәнлектәрҙе яҡшыртыу планының үҙған йылда республика буйынса 21,9 процентҡа ғына үтәлеүен күрһәтеү ҙә етә. Айырым райондарҙа эш тағы ла насарыраҡ. Дыуан районында [illegible] 4,8 процентҡа, [illegible]дәк районында 5,6, Ҡырмыҫҡалы районында 15 процентҡа ғына үтәлгән. Ә Балтач һәм Илеш райондарында тәбиғи сабынлыҡтарҙы яҡшыртыу эше бөтөнләй алып барылмаған. Районлар һәм колхоздарҙың етәкселәре һаман да сабынлыҡтарҙың урожайлылығын күтәреүҙең мөһимлеген аңламайҙар.

Башҡортостан шарттарында сабынлыҡтарҙан юғары бесән урожайы алып була. Быны тәжрибә станцияларының һәм алдынғы колхоздарҙың эше асыҡ күрһәтә. Башҡортостан малсылыҡ-тәжрибә станцияһы Ағиҙел йылғаһы буйындағы сабынлыҡтарҙы тамырынан яҡшыртыу һәм ике тапҡыр сабып алыу арҡаһында ике йылда һәр гектарынан уртаса 108,7 центнер бесән урожайы алды.

Сабынлыҡтар һәм көтөүлектәрҙе тамырынан яҡшыртыу мал аҙығы сәсеү әйләнештәрендә үткәрелә. Ул тәбиғи сабынлыҡтарҙы һөрөү һәм уның еҫәмен бағыу культураларҙы сәсеү өсөн 2-3 йыл файҙаланыу менән бәйләнгән. Ә һуңынан ул тағы ла үлән ҡатнашлығына әйләндерелә. Тамырынан яҡшыртыу, беҙҙең мәғлүмәттәр буйынса, урожайҙы 3-4 тапҡыр күтәрә.

Сабынлыҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе өҫтән яҡшыртыу ябай һәм уны һәр бер колхоз эшләй алырлыҡ. Ул түбәндәгеләрҙән тора: органик һәм минераль ашламаларҙы өҫтән генә индереү, ҡыуаҡтарҙан таҙартыу, сабынлыҡтарҙы ҡыйҙарҙан, таштарҙан таҙартыу, ҡымырҫҡа, сысҡан ояларын, ағас төптәрен бөтөрөү, бөленгәргә өҫтән үлән орлоҡтары сәсеү. Өҫтән яҡшыртыу юлы менән сабынлыҡтарҙың урожайлылығын 2-3 тапҡыр күтәреп була.

Органик һәм минераль азот ашламалары индереүҙән иң яҡшы һөҙөмтәләр алына. Тәбиғи сабынлыҡтарҙа һәр гектарға 30 тонна тиреҫ индергәндә бесән урожайы 16,8-ҙән алып 33,5 центнерға тиклем, 10 мискә тиреҫ шыйыҡсаһы индергәндә 45 центнерға тиклем, 3 центнер сульфат аммонийы индергәндә 43,5 центнерға тиклем һәм тулы минераль ашлама индергәндә 51,6 центнерға тиклем арта. Тулы минераль ашламалар индергәндә Ағиҙел йылғаһы буйы сабынлыҡтарының уртаса бесән урожайы, ҡалҡыулыҡ урындарҙа һәр гектарҙан 17,1 центнерҙан 36,7 центнерға һәм тигеҙлек урындарҙа 16,5 центнерҙан 33,6 центнерға тиклем артты.

Был миҫалдарҙа күренгәнсә, ашлау һөҙөмтәһендә сабынлыҡтарҙың һәм көтөүлектәрҙең бесән буйынса урожайлылығы икеләтә-өсләтә күтәрелә. Тимәк, аҙ бесәнле сабынлыҡтарҙы бесән алыуҙың мул сығанағына әйләндереп була.

Ашламаларҙың бөтә төрҙәре лә иртә яҙҙа йәки көҙ көнендә ямғырлы осорҙа индерелә. Бесәнде беренсе тапҡыр сабып алыуҙан һуң индерелгән азотлы ашламалар икенсе тапҡыр сабыу өсөн ҡурпы урожайын икеләтә арттыра. Азотлы ашламаның бер центнеры 6-7 центнерға, көҙгө йыл индерелгән бер тонна тиреҫ 1 центнер, бер мискә тиреҫ шыйыҡсаһы бер центнерға тиклем өҫтәмә бесән урожайы алыуға мөмкинлек бирә.

Һәр бер колхоз ашламалар өсөн сереткән тиреҫ, компост, көл йыйнау, тиреҫ шыйыҡсаһы һаҡлау сараларын күрергә һәм яҙ башланыу менән был ашламаларҙы сабынлыҡтарға һәм көтөүлектәргә индерергә тейеш. Ҡыуаҡлыҡтарҙан таҙартыу, ҡыйҙарҙы, таштарҙы йыйнау, түмәрҙәрҙе, ҡымырҫҡа, сысҡан ояларын бөтөрөү эштәрен яҙ башында үткәрергә мөмкин.

Сабынлыҡтарҙың урожайлылығын күтәреүҙә ҡуҙаҡлы үләндәр сәсеү ҙур роль уйнай. Архангель районы «Маяк» һәм М. Горький исемендәге колхоздарҙың практикаһы яҡшы һөҙөмтәләргә ирешергә мөмкин икәнен күрһәтә. Был колхоздарҙа аҡ клевер сәсеү, үлән сифатын яҡшыртыуҙан башҡа, урожайлылыҡты ике тапҡыр күтәрҙе. Сабынлыҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса бөтә саралар колхоздарҙың производство пландарына индерелергә һәм баҫыусылыҡ эштәре менән бер рәттән эшләнергә тейештәр.

Сабынлыҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу саралары менән бергә, уларҙың дөрөҫ файҙаланылыуына айырыуса иғтибар бирергә кәрәк. Бөтә колхоздар ҙа малдарҙы загондарҙа көтөүгә күсергә тейештәр. Бындай саралар көтөүлектәрҙең бесән урожайын 20-25 процентҡа күтәрә.

Сабынлыҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыуҙа МТС-тар ҙур роль уйнарға һәм колхоздарҙы кәрәкле машиналар һәм инвентарҙар менән ҡоралландырырға тейештәр. Эштең бындай төрөн колхоздарҙың МТС-тар менән төҙөлгән договорҙарында күрһәтелеү тәҡдим ителә.

Һәр бер колхозда мал аҙығы туплау буйынса махсус бригадалар ойошторорға һәм бындай бригадалар өсөн кадрҙар әҙерләү эшенә иғтибар бирергә кәрәк.

1951 йыл тәбиғи сабынлыҡтарҙы ныҡлы яҡшыртыу йылы булырға тейеш. Ауыл хужалығы фәне ҡаҙаныштарын һәм алдынғы тәжрибәләрҙе киң ҡулланып, киң колхозсылар массаһын тәбиғи сабынлыҡтар һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыуға мобилизовать итеүгә йүнәлдерергә кәрәк. Был, ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыуҙың төп сығанағы һәм общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын уңышлы үтәүҙә мөһим шарт булып тора.

Д. Коврижных,
ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.

Өфө ҡалаһының 40-сы номерлы балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүселәр, унда ойошторолған йәнле тәбиғәт мөйөшө менән ҡыҙыҡһыналар.
Һүрәттә: Балалар йәнле тәбиғәт мөйөшөндә йорт ҡуяны ашаталар.
В. Бородулин фотоһы.

СЕМЬЯ ҺӘМ МӘКТӘП

Балаларҙы семьяла тәрбиәләү ата-әсәләрҙең шәхси эше генә түгел, ул государство әһәмиәтендәге эш.

Балаларҙы тәрбиәләүҙә ата-әсәләргә төрлө яҡлап ярҙам итеүҙә мәктәптең роле айырыуса ҙур. Мәктәптә үткәрелгән һәр бер сара семьяла дауам иттерелә. Шуның өсөн мәктәп менән семья араһында бик яҡын һәм тығыҙ бәйләнеш урынлаштырырға кәрәк.

Был мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә мәктәптәрҙә ойошторолған ата-әсәләр комитеты ҙур урын тота. Мәҫәлән, Тәтешле урта мәктәбенең ата-әсәләр активы интернат эшенә ҙур ярҙам күрһәтә, уҡыусыларҙың мәктәпкә йөрөшөн күҙәтә һәм айырым етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ҡарата конкрет саралар күрә. Күптән түгел ата-әсәләр комитетының инициативаһы буйынса уҡыусылар көсө менән концерт һәм спектаклдәр ҡуйылды. Шунан йыйналған аҡса ярҙамға мохтаж булған балаларға бирелде. Шулай уҡ был комитет ата-әсәләр араһында педагогик пропаганда ойоштороу эшенә лә бөтә яҡлап ярҙам итә.

Тәжрибә ата-әсәләр һәм уҡытыусылар коллективтары тығыҙ бәйләнеш тотоп эш иткән урындарҙа уҡыусыларҙың дәрес ҡалдырыуҙары һирәк булыуын, ә дәрестә өлгәшеүҙең юғары булыуын күрһәтә.

Өфө ҡалаһының 11-се номерлы мәктәбендә ата-әсәләр лекторийы бар. Уға ата-әсәләр комитеты етәкселек итә. Унда систематик рәүештә лекциялар була. Был лекцияларҙа балаларҙы тәрбиәләү һәм уҡытыу мәсьәләләренә айырата ныҡ иғтибар ителә. Лекторийҙа башҡарылған эштәр һөҙөмтәһендә ата-әсәләр балаларҙа эшсәнлек, ныҡышмалылыҡ һәм эш һөйөүсәнлек сифаттарын тәрбиәләүҙә мәктәпкә бик ҙур ярҙам күрһәтә башланылар. Улар үҙҙәренең балалары өсөн режим билдәләнеләр һәм уның үтәлеүен тикшереп торалар. Был мәктәптә экзамендарға әҙерлек ваҡытында эште дөрөҫ ойоштороуға өлгәшелде. Йыйылыштарҙа класс етәкселәре ата-әсәләргә экзамендарға әҙерлек осоронда уҡыусы балалар өсөн режимдең әһәмиәтен, үткән материалдарҙы ҡабатлағанда уҡыусылар алдында ниндәй талаптар ҡуйылырға тейешлеген һәм ҡабатлауҙы нисек ойошторорға кәрәклеген аңлаттылар. Ҡайһы бер фәндәр буйынса өлгәшмәгән балаларҙың ата-әсәләре менән айырым эш алып барыуҙы һәм артта ҡалыусылыҡҡа ҡаршы нисек көрәшергә кәрәклеге тураһында аңлатылды. Мәктәп менән ата-әсәләр коллективы араһында алып барылған был бәйләнеш ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе.

Бөрө ата-әсәләр өсөн ойошторолған ҡала лекторийы ла үҙенең эшен планлы рәүештә алып бара. Унда балаларҙы коммунистик рухта тәрбиәләү мәсьәләләре буйынса күп кенә лекциялар уҡыла һәм докладтар ойошторола. Мәҫәлән, күптән түгел генә «Семьяла тәрбиә тураһында Макаренко» тигән темаға лекция уҙғарылды. Ул ата-әсәләргә ҙур йоғонто яһаны һәм улар Макаренко хеҙмәттәренең башҡорт теленә тәржемә ителеүен һоранылар.

Күп кенә райондарҙа бер нисә йылдар буйына ата-әсәләрҙең район конференциялары уҙғарылып килә. Райондағы бөтә мәктәптәрҙең вәкилдәре ҡатнашҡан был конференцияларҙа семьяла балаларҙы коммунистик рухта тәрбиәләү мәсьәләһе тикшерелә. Ата-әсәләр тәрбиә эшендәге тәжрибәләре менән уртаҡлашалар һәм фекер алышалар. Бындай конференциялар яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Мәҫәлән, Тәтешле районының ата-әсәләр конференцияһында дөйөм мәжбүри уҡыу мәсьәләһе тикшерелде. Был тәңгәлдә сериөз етешһеҙлектәр асылды һәм уларҙы бөтөрөү буйынса конкрет саралар күрелде. Һөҙөмтәлә 30-ҙан артыҡ уҡыусы мәктәпкә кире ҡайтарылды.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә «Семья и школа» журналы ҙур роль уйнай. Стәрлетамаҡ хеҙмәтсәндәре араһында был журнал ҙур популярлыҡ менән файҙалана. Уны ата-әсәләр яратып уҡыйҙар. Ундағы ҡайһы бер мәҡәләләр айырым билдәләнгән көндәрҙә радио аша таңшырыла. Шишмә районының мәктәптәрендә лә ата-әсәләр йыйылышында журналға йыш ҡына мөрәжәғәт итәләр.

Семьяла ата-әсәләр һәм уҡыусылар менән уҙғарылған айырым бәседәләр ҙә семья менән мәктәп араһындағы бәйләнеште нығыталар һәм уҡыусы балаларҙы коммунистик рухта тәрбиәләүҙә, уҡыу сифатын яҡшыртыуҙа уңышлы һөҙөмтәләр бирәләр.

Е. Заруди.

Академия театры сәхнәһендә — „Яҙғы йыр“

Кисә Башҡорт государство Академия драма театры сәхнәһендә Назар Нәжмиҙең «Яҙғы йыр» исемле музыкаль пьесаһы ҡуйылды.

Спектакль РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе, режиссер А. Мөбәрәков тарафынан әҙерләнде, художнигы — Ғ. Имашева.

Ролдәрҙе башҡарыуҙа театрҙың таныҡлы көстәре ҡатнаштылар.

Пьеса хәҙерге заман темаһына, совет студенттарының тормошона арналған.

Республика театры сәхнәһендә студенттар тормошо тураһындағы тәүге әҫәрҙе тамашасылар йылы ҡаршыланылар.

Пьесаның музыкаһы композитор Заһир Исмәғилов тарафынан яҙылған.

Район һәм ауыл библиотекаларына иғтибар көсәйтелһен

Республикабыҙҙа район һәм ауыл библиотекаларын йыһазландырыу, уларҙы яҡшы һәм уңайлы биналар менән тәьмин итеү буйынса ҙур ғына эштәр башҡарыла. Күп кенә ауылдарҙа колхозсыларҙың инициативаһы менән библиотекалар өсөн яңы биналар төҙөү эше башланды. Урындағы партия һәм совет органдарының ярҙамы арҡаһында был хәрәкәт киң колас алды. Шуның һөҙөмтәһендә үҙған йылда республика күләмендә 25 ауыл библиотекаһы төҙөлдө һәм 17 ҡала, район библиотекалары эргәһендә балалар библиотекалары асылды.

Хәҙер Башҡортостанда бөтәһе 325 библиотека эшләй. Шуларҙан 63-сө район, 218-е ауыл библиотекалары. 1951 йылда тағы ла 34 ауыл библиотекаһы төҙөү һәм клубтар эргәһендә 135 библиотека ойоштороу планлаштырыла. Шулай итеп, 1951 йылдың аҙағында 416 ауыл библиотекаһы эшләйәсәк.

Яңы библиотекалар ойоштороу, уларҙы биналар һәм кәрәкле оборудованиелар менән тәьмин итеү мәсьәләһенә күп кенә район һәм ауыл Советы исполкомдары ныҡлы иғтибар итәләр. Ләкин был эш бөтә райондарҙа ла ҡәнәғәтләнерлек тигән һүҙ түгел әле. Мәҫәлән, Бүздәк районы Михайловка ауыл Советында яңы библиотеканы ауыл Советы исполкомы бинаһының коридорына урынлаштырғандар һәм ул бөтөнләй йыһазландырылмаған. Куйбышев районының Бәкәй ауыл библиотекаһы ла шундай уҡ хәлдә.

Яңы библиотекалар төҙөү һәм уларҙы ремонтлау өсөн государство тарафынан күп кенә средстволар ебәрелә. Тик үҙған йылда ғына ошо маҡсат өсөн 365 мең һум аҡса бүленгәйне. Ҡайһы бер райондарҙа был средстволар дөрөҫ һәм тейешле күләмдә файҙаланылмайҙар. Мәҫәлән, Благовар район Советы исполкомына район библиотекаһы һалыу өсөн 30 мең һум аҡса бирелгәйне. Ләкин был аҡсаға иҫке, эшкә яраҡһыҙ бина һатып алынған. Уға капиталь ремонт эшләһәләр ҙә, библиотека өсөн яраҡлы бина килеп сыҡмаған. Шулай уҡ Йомағужа, Мәләүез райондарында ла средстволар тейешенсә файҙаланылмағандар. Покровка һәм Ҡалтасы райондарында бынан өс йыл элек библиотека өсөн һалына башлаған биналарҙы һаман да эшләп бөтөрә алмайҙар.

Һуңғы йылдарҙа библиотекаларҙың китап фондын байытыу буйынса яҡшы ғына уңыштарға өлгәшелде. Хәҙер 325 библиотекала 1 миллион 800 мең дана китап бар. Шул иҫәптән, 63 район библиотекаһында 600 мең дана китап иҫәпләнә. Был, һәр бер библиотекаға 9,5 мең дана китап тура килә тигән һүҙ. Шулай уҡ ауыл библиотекаларында ла китаптар һаны уртаса икешәр меңгә етә.

Ауыл һәм район библиотекалары үҙҙәренең китап фондтарын марксизм-ленинизм классиктарының, Сталин премияһы лауреаттарының китаптары[...] тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороусылар — [...]чурин, Докучаев, Вильямс, Лысен[...]ҙәре иҫәбенә байыталар.

Ләкин был тәңгәлдә лә күп кенә [...]һеҙлектәр бар. Мәҫәлән, Талбаҙы[...]тешле, Байҡыбаш райондарында [...] фондын арттырыу өсөн 1950 йыл[...]релгән средствоның 65 — 70 [...] генә файҙаланылған. Стәрлебаш, [...]лы райондарында был эш бик [...] тора.

Библиотекаларҙы политик-фәнни [...] таптар һәм художестволы әҙәбиәт [...] тәьмин итеүҙә бибколлектор тө[...] булып иҫәпләнә. Ләкин ул үҙенең [...] ҡәнәғәтләнерлек итеп ойоштора а[...] Үҙған йылда ул күп кенә район[...] ауыл библиотекаларын китаптар [...]рәк тә башҡорт һәм татар теле[...]нән комплектовать итеү эше[...] Бибколлектор айырым библиотека[...] китаптар менән тәьмин итеү эшен[...] казчиктарҙың талаптары буйынса т[...] ә үҙенең мөмкинлегенән сығып ты[...] итә.

Библиотекаларҙың китап фонды[...] йытыуҙа учет эше ҙур роль уйнай[...] кенә урындарҙа был мәсьәләгә бик [...] иғтибар ителә әле. Шуның һөҙөмтә[...] юғалтыуҙарға юл ҡуйыла. Быға [...] итеп Воскресенск, Йомағужа, Б[...] Дәүләкән һәм башҡа райондарҙағы [...]лиотекаларҙы алырға мөмкин.

Республикала библиотекалар се[...] киңәйә һәм тағы ла [...] һанда квалификациялы работниктар [...]лап ителә. Уларҙы кадрҙар менән тәь[...] итеү буйынса Өфө библиотека техни[...]мы байтаҡ ҡына эштәр башҡара. [...] был берҙән-бер техникум республи[...] өсөн етерлек күләмдә кадрҙар еҫ[...]алмай. Шуның өсөн библиотекарҙар[...] ситтән тороп уҡыуға мөмкин [...] күберәк ылыҡтырыу сараларын күр[...] кәрәк. Министрҙар Советы эргәһен[...] культура-ағартыу учреждениелары [...]равлениеһы библиотека работниктар[...] тавын яҡшыртыу эше менән ныҡ[...] шөғөлләнергә тейеш. Бөтә ауыл биб[...]текаларының мөдирҙәре — урта; рай[...] библиотекаларының мөдирҙәре — юғ[...] белемле булырға тейеш тигән тала[...] ҡуйырға ваҡыт инде.

Урындағы партия, совет ойошма[...] район һәм ауыл библиотекаларының [...]тәрен яҡшыртыу, бигерәк тә уларҙы[...] яраҡлы биналар менән тәьмин итеү бу[...]йынса эшлекле саралар күрергә бурыс[...]лылар. Ауылда библиотека идеоло[...] эшенең мөһим участкаһына әйлә[...]дергә тейеш.

С. Ваһитов,
Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының культура секторы [...]торы.

Күк һағыҙ үҫтереү

Мин 13 йыл инде күк һағыҙ үҫтереүҙә эшләп килдем. Тәүге өс йылда звено етәксеһе булып эшләнем, унан һуң колхозда өс звенонан торған бригада төҙөлдө. Мин бригадир булып эшләй башланым.

Күп йылдар буйына күк һағыҙ үҫтереүҙә эшләү һөҙөмтәһендә мин бай тәжрибәләр тупланым. Беҙҙең бригада йыл һайын күк һағыҙҙан юғары урожай үҫтерел килә.

Мәҫәлән, үткән йыл 8 гектар майҙандағы күк һағыҙ сәсеүлегенән 62 центнер тамыр, һәр бер гектарҙан 34,5 килограмм орлоҡ алдыҡ һәм государство планын арттырып үтәнек.

Бындай ҙур уңыштарға беҙҙең бригаданың коллективы ерҙе яҡшы итеп эшкәртеү һәм урындағы, шулай уҡ минераль ашламаларҙы дөрөҫ файҙаланыу арҡаһында өлгәште. Беҙ күк һағыҙ сәселә торған ерҙе алдан уҡ яҡшы итеп әҙерләйбеҙ. Башта һәр бер гектар иҫәбенә 30 — 40 тонна тиреҫ сығарып өйөп ҡуябыҙ, ул ерҙе һөргәнгә тиклем яҡып ята. Һөрөү алдынан уны тигеҙләп таратабыҙ.

Минераль ашламаларҙан сульфат аммонийын, суперфосфат һәм калий тоҙон бергә ҡушып, һәр гектарға 12 килограмм иҫәбенән ергә һибеп сығабыҙ. Шунан һуң ер һөрелә, яҡшы итеп тырматыла. Дымды һаҡлап алып ҡалыу өсөн ер катоҡ менән баҫтырыла. Сәсеү ваҡыты еткәс, маркир менән рәт араларын ҡуйып сығабыҙ һәм гектарына 2,4 килограмм нормаһында орлоҡ сәсәбеҙ. Сәскәндән һуң, һәр гектарға 6 центнер иҫәбенән, тағы ла серегән тиреҫ һибәбеҙ.

Күк һағыҙҙы агротехника талаптарына ярашлы яҡшы итеп сәсеү генә етмәй, уны йыйнап алғанға тиклем осорҙа яҡшы итеп тәрбиәләргә кәрәк. Мәҫәлән, үткән йыл күк һағыҙ сәселгән ерҙе ҡар һәм яҙ көнө ҡар һыуҙары тотолдо. 8 апрелдә гектарға 80 килограмм иҫәбенән сульфат аммонийы һәм 1,5 центнер иҫәбенән калий тоҙо һиптек. 10 майҙа орлоҡто беренсе тапҡыр йыйнап алғанға тиклем, ике тапҡыр утаныҡ һәм [...] тапҡыр рәт араларын йомшарттыҡ. Орлоҡто икенсе тапҡыр йыйнағанға тиклем был эштәр тағы ла ҡабатланды. Гектарға бер центнер иҫәбенән суперфосфат ашламаһы индерҙек.

Беҙ 1951 йылдың урожайы өсөн [...] гектар күк һағыҙ сәсеп ҡалдырҙыҡ. Быйыл да мул урожай үҫтереп алырға һүҙ бирҙек. Беҙгә алған йөкләмәләребеҙҙе намыҫ менән үтәргә бөтә мөмкинлектәр бар.

С. Йәминев.
Стәрлебаш районы Ленин исемендәге колхоздың күк һағыҙ үҫтереү бригадаһы бригадиры.

Урындарҙан яҙалар

Шишмә районы Жданов исемендәге колхоз игенселек өлкәһендә лә, шулай уҡ общественный малсылыҡты үҫтереүҙә лә ҙур ғына уңыштарға өлгәште. Колхоз үлән баҫыулы сәсеү әйләнешен ҡулланырға башланы. Хәҙер күп йыллыҡ үләндәр сәсеү майҙаны 450 гектарға етә.

Колхоз үҙған йылда государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыу планын срогынан алда арттырып үтәгәйне. Һыйырҙар һәм һарыҡтар өсөн стандарт торлаҡтар төҙөлдө. 1951 йылға колхоз [...] торлаҡтары төҙөү буйынса тағы ла ҙурыраҡ бурыстар билдәләне.

Хәҙер колхозда яҙғы баҫыу эштәре киң йәйелдерелде. Колхозсылар бөртөклө культураларҙың һәр бер гектарынан йөҙәр пот урожай алырға һүҙ биреп, май аҙыны социалистик ярышына ҡушылдылар.

Р. Минһажев.

КУЛЬТУРА-АҒАРТЫУ УЧРЕЖДЕНИЕЛӘРЕНЕҢ ЭШЕН ТЕЙЕШЛЕ ЮҒАРЫЛЫҠҠА ҠУЙЫУ ӨСӨН

(Хеҙмәтсәндәрҙең редакцияға ебәргән хаттарына күҙәтеү)

Культура-ағартыу учреждениелары хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта, совет патриотизмы рухында, Тыуған илгә һәм большевиктар партияһына тәрән бирелгәнлек рухында тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай. Сөнки улар хеҙмәтсәндәрҙе партия һәм хөкүмәт тарафынан үткәрелгән мөһим сараларҙы тормошҡа ашырыуға мобилизациялай, шулай уҡ илебеҙҙә булған төрлө яңылыҡтар, халыҡ-ара хәл, фән, техника ҡаҙаныштары һәм алдынғы эш тәжрибәләре менән таныштыра бараалар. Бынан күренгәнсә, ауыл клубтары, уҡыу өйҙәре, библиотекалар халыҡты политик тәрбиәләүҙә тайыт ҙур көс булып тора.

Ләкин республикабыҙҙың ҡайһы бер райондарында культура-ағартыу учреждениеларының эшен тейешенсә баһалап еткермәйҙәр әле. Был турала «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы редакцияһына күп кенә хаттар килә. Хәбәрсебеҙ В. Даутов беҙгә ебәргән хатында Маҡар районы Байғужа ауылында культура-ағартыу эштәренең торошо тураһында былай тип яҙа:

— Байғужа ауылының клубы йәштәрҙең культура үҫеге хеҙмәтен үтәй алмай. Ул күп ваҡыт йоҙаҡлы була. Клуб йыһазландырылмаған, уның стенаһында бер генә лозунг та, плакат та юҡ. Бында ремонт өсөн аҡса бүленгән булһа ла, ул иң өсөндәр, файҙаланылманы. Клуб мөдире иптәш Ҡорбанғәлиев үҙ эшен яҡшыртыу тураһында бер төрлө лә хәстәрлек күрмәй. Ә ауыл Советы исполкомы был хәлгә килешеп ҡарай.

Пәхи быня шул уҡ Маҡар районында йәшәүсе иптәш З. Фәтиховтың хатын алайыҡ:

— Көҙән ауыл Советындағы клуб һәм библиотека онотҡанда бер генә асыла. Шуның арҡаһында ауыл йәштәре буш ваҡыттарында культуралы ял итергә урын таба алмай аптырап йөрөйҙәр. Клуб янындағы библиотекала күп кенә китаптар бар. Ләкин ул һәр ваҡыт йоҙаҡлы тороу арҡаһында колхозсылар бындағы әҙәбиәттән һәм газета-журналдарҙан файҙалана алмайҙар. Клуб мөдире иптәш Б. Нурғәлиев үҙ эшенә бер төрлө лә яуаплылыҡ һиҙмәй. Ауыл Советы исполкомы һәм партия ойошмаһы уларҙан конкрет эш талап итмәйҙәр, көндәлек эштәрендә практик ярҙам күрһәтмәйҙәр.

Шул уҡ ваҡытта урындарҙағы ҡайһы бер уҡыу өйҙәренең эштәре лә үҙ юғарылығында түгел. Уларҙа булған күп төрлө әҙәбиәт һәм газета-журналдар киң массаны хеҙмәтләндереүгә йүнәлдерелмәгән. Быны дөрөҫләү өсөн иптәш Ф. Исламовтың редакцияға яҙған хатын күрһәтеп үтеү ҙә етә. Ул үҙенең хатында былай яҙа:

— Яңауыл районы Сытырман ауыл Советы эргәһендәге уҡыу өйөнөң китап фонды бай ғына. Шулай уҡ бында күп кенә һанда газета-журналдар алдырыла. Ләкин эш насар ойошторолоу һөҙөмтәһендә колхозсылар был китаптарҙы даими уҡып бара алмайҙар. Мөһим темаларға лекциялар һәм докладтар үткәрелмәй.

Культура-ағартыу учреждениеларының насар эшләүҙәре тураһында Шишмә, Нуриман, Ҡырмыҫҡалы һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙан да сигналдар бар. Был сигналдарҙың авторҙары ауыл клубтары, уҡыу өйҙәре һәм библиотекаларҙың ҡәнәғәтләнерлек эшләмәүҙәре тураһында яҙалар, уларҙың эштәрен хеҙмәтсәндәрҙең һорауҙарына яуап бирерлек итеп ойоштороуын талап итәләр.

Бөтә төр хужалыҡ эштәренең уңышлы башҡарылыуы — хеҙмәтсәндәр араһында культура-ағартыу һәм политик-тәрбиә эштәренең киң йәйелдерелеүенә тығыҙ бәйләнгән. Шуға күрә ауыл культура-ағартыу учреждениеларына иғтибарҙы ҡырҡа көсәйтергә һәм уларҙың эш сифаттарын яҡшыртыуҙа бөтә сараларҙы күрергә кәрәк. Клубтарҙың, уҡыу өйҙәренең һәм библиотекаларҙың бөтә эшмәкәрлеге халыҡтың үҫә барған культура талаптарын ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелергә тейеш.

Хәҙер республикабыҙҙа яҙғы сәсеү ҡыҙыу алып барылған бер ваҡытта, ауылда культура-ағартыу, политик-массовый эштәрҙе көсәйтеп ебәреү айырыуса ҙур роль уйнай. Бында шуны ла әйтергә кәрәк, ауылда культура-ағартыу эштәрен алып барыуҙы фәҡәт клуб һәм уҡыу өйҙәре работниктарына ғына тапшырып ҡуйырға ярамай. Был эш менән партияның тәүге ойошмалары, ауыл Советтары исполкомдары һәм комсомол ойошмалары ныҡ ҡыҙыҡһынырға, уны тейешле юғарылыҡҡа ҡуйыуға көндәлек ярҙам күрһәтергә һәм конкрет етәкселек итергә бурыслылар.

Бына шул ваҡытта ғына беҙ, хеҙмәтсәндәрҙе коммунизм рухында тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнаған культура-ағартыу учреждениеларының эштәрен көндән-көн талаптарына яуап бирерлек итеп ҡуя алырбыҙ.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 16 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһенең 16 апрелдә тапшырылған белдереүендә, Үҙәк фронтта дошман тарафынан яһалған һөжүм Халыҡ армияһының частары һәм Ҡытай добровольцтары тарафынан туҡтатылды, тип әйтелә.

15 апрелдә Халыҡ армияһының частары дошмандың 3 самолетын атып төшөрҙөләр.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

ПО 1936 Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл № 77 (8794) 20 АПРЕЛЬ йома

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

АЗЕРБАЙЖАН ССР-ЫНЫҢ НЕФТЬ ПРОМЫШЛЕННОСЕ ЭШСЕЛӘРЕ, ИНЖЕНЕРҘӘРЕ, ТЕХНИКТӘРЕ ҺӘМ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕНӘН СОВЕТ ХАЛҠЫНЫҢ БӨЙӨК ЮЛБАШСЫҺЫ ҺӘМ УЧИТЕЛЕ ИПТӘШ И. В. СТАЛИНГӘ (1-се бит).

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ 1951 ЙЫЛ 17 АПРЕЛДӘГЕ УЛТЫРЫШТАРЫ ТУРАҺЫНДА ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ (2-се бит).

РСФСР ФИНАНС МИНИСТРЕ ДЕПУТАТ И. И. ФАДЕЕВТЕН ПОМРАҠЛАУ ҺҮҘЕ (2-се бит).

1951 ЙЫЛҒА РОССИЯ СОВЕТ ФЕДЕРАТИВ СОЦИАЛИСТИК РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ГОСУДАРСТВО БЮДЖЕТЕ ТУРАҺЫНДА ЗАКОН (2—3-сө бит).

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ УЛТЫРЫШЫ. Депутат Ф. З. Заһафурановтың телмәре (3-сө бит).

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫН ҺАЙЛАУ ТУРАҺЫНДА (3-сө бит).

РСФСР ХӨКҮМӘТЕН — РСФСР МИНИСТРҘАР СОВЕТЕН ТӨҘӨҮ ТУРАҺЫНДА (3-сө бит).

1946—1950 ЙЫЛДАРҒА ДҮРТЕНСЕ (ҺУҒЫШТАН ҺУҢҒЫ БЕРЕНСЕ) БИШ ЙЫЛЛЫҠ ПЛАНДЫҢ ҮТӘЛЕШ ЙОМҒАҠТАРЫ ТУРАҺЫНДА СССР ГОСУДАРСТВО ПЛАН КОМИТЕТЕНЕҢ ҺӘМ СССР ҮҘӘК СТАТИСТИКА УПРАВЛЕНИЕҺЫНЕҢ БЕЛДЕРЕҮЕНӘ СИТ ИЛДӘРҘӘГЕ ОТКЛИКТАР (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Ҡаланың ауылға ярҙамын көсәйтергә

Коммунистар партияһы, Совет хөкүмәте һәм лично иптәш Сталин социалистик ауыл хужалығын үҫтереү, ауыл эшсәндәренең культура һәм мул тормошо тураһында даими хәстәрлек күрәләр. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарҙары был хәстәрлектең асыҡ сағылышы булып тора. Пленум һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын тиҙерәк аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү — СССР-ҙа иген тағы хужалығын уңышлы үҫтереүҙең һәм халыҡтың материаль тормош кимәлен тағы ла яҡшыртыуҙың кәрәкле шарты тип күрһәтте һәм, быға беренсе дәрәжәлеге эш итеп ҡарап, серьез әһәмиәт бирҙе. Пленум: **«Бөтә государство өсөн ҙур әһәмиәтле булған был бурысты хәл итеү партия һәм совет органдарының, колхозсыларҙың, совхоз һәм МТС эшселәренең, ауыл хужалығы специалистарының, ауыл хужалығы өсөн заказдар үтәүсе промышленность эшселәренең һәм инженер-техник работниктарының иғтибар үҙәгендә торорға тейеш»** тип айырыуса билдәләп үтте.

Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре, февраль Пленумы ҡарарҙарын үтәп, ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Колхоздар, совхоздар урожай үҫтереү буйынса һуғышҡа тиклемге кимәлде уҙып киттеләр, общественный малсылыҡтың продукт биреүсәнлеген даими күтәрелеүҙә дауам итә, тормошҡа урожай үҫтереүҙең нигеҙе булған баҫыу һаҡлаусы урман полосалары үҫтереүҙең сталинсе пландары уңышлы тормошҡа ашырыла.

Быйыл республикабыҙҙың колхоздары, совхоздары һәм МТС-тары алдында торған бурыстар тағы ла ҙурыраҡ. Урожай кимәле үҙған йылға ҡарағанда күп юғары булырға тейеш. Сәсеү майҙаны 383 мең гектарға арттырыла һәм һуғышҡа тиклемге күләм самаһына еткерелә. Малсылыҡты үҫтереү, бинаалар төҙөү, колхоз ауылын төҙөкләндереү, электрлаштырыу буйынса бик мөһим саралар билдәләнгән. Ауыл ерҙәрендә 1951 йыл эсендә егәрлеге 1600 киловатт булған 11 яңы гидроэлектростанция төҙөлөп, эксплуатацияға тапшырылырға тейеш.

Социалистик ауыл хужалығы алдында торған ҙур яуаплы бурыстарҙы үтәүҙә ҡаланың ауылға ярҙамы айырыуса әһәмиәтлә эйә. Промышленность предприятиелары йыл һайын колхоздарға, совхоздарға, МТС-тарға, ЛЭС-тарға яңы ҡеүәтле машиналар бирәләр. Завод, фабрика коллективтәре, ҡалаларҙағы төрлө учреждениелар шефлыҡ итеү юлы менән социалистик ауыл хужалығын артабан үҫтереүҙә актив ҡатнашалар.

Сталинсе биш йыллыҡтар ҡалаһы Черниковскийҙағы промышленность предприятиелары республикабыҙҙың 16 МТС-ына шефлыҡ итәләр. Үҙған йылда шефтар МТС-тарға 2 меңдән артыҡ төрлө запас частар, 3 меңдән артыҡ инструмент, 30 тоннанан артыҡ металл, 27 станок һәм башҡа күп материалдарҙы бирҙеләр. Йөҙҙән артыҡ специалист урындарға барып, ремонт эштәрендә практик ярҙамдар күрһәтте. Партия ойошмалары тарафынан ебәрелгән агитаторҙар, докладсылар МТС эшселәре араһында ҙур осталыҡ менән массовый-политик эш ойошторалар һәм уларҙы менән коллективтарҙы яңы еңеүҙәргә рухландыралар.

Өфө нефть ғилми-тикшеренеү институты коллективы Бөҙәяҙ районының «Коммунизм» колхозына 1948 йылдан бирле шефлыҡ итеп килә. Партия ойошмаһы был эшкә һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә тота. Шефлыҡ эше бөтә йыл әйләнәһенә алып барыла. Институт үҙған йыл яҙғы сәсеү, урожай йыйыу кампаниялары осоронда колхозға автомашиналар ебәрҙе, комбайнсылар үткәрҙе. Коллектив көсө менән колхозда библиотека ойошторолдо. Институттың план бүлеге сотруднигы иптәш Силеевский планлаштырыуҙа һәм иҫәп-хисап эштәрен юлға һалыуҙа ярҙам итте.

Шефтар ярҙамында колхоздар, МТС-тар, ЛЭС-тар политик һәм хужалыҡ бурыстарын хәл итеүҙә үҙҙәрендә яңы көс табалар. Был бәйләнеш ҡала менән ауыл араһындағы айырмалыҡты бөтөрөүҙә һәм ауылдағы хеҙмәтен индустриаль хеҙмәткә әйләндереүҙә мөһим сара булып тора.

Ә шулай ҙа айырым урындарҙа был мөһим мәсьәләгә тейешле әһәмиәт бирел еткермәү ваҡиғалары ла юҡ түгел. ВКП(б)-ның Белорет ҡала комитете һуңғы ваҡытта шефлыҡ эшен бөтөнләй үҙ ағышына тапшырып ҡалдырған. Ҡаланың сикһеҙ ҙур промышленность предприятиелары — металлургия комбинаты, ҡорос-сыбыҡ заводы күп кенә МТС-тарҙың, колхоздарҙың шефы булып иҫәпләнһәләр ҙә, бер нәмә лә эшләмәйҙәр. МТС-тарҙа, колхоздарҙа яҙғы сәсеү эштәре башланды. Был осорҙа шеф ойошмалары үҙҙәренең эшен айырыуса көсәйтеп ебәрергә тейеш инеләр. Ләкин ҡаланың бер генә промышленность предприятиеһендә лә шефлыҡ итеү буйынса планлы эш күренмәй әле.

Ағиҙел пароходствоһы управлениеһе Благовар районының Ленин исемендәге колхозына шефлыҡ итеп килә ине. Ләкин был эш һуңғы ваҡытта бөтөнләй һүнеп ҡалған. Урожай йыйыу кампанияһынан бирле пароходствонан бер генә кеше лә колхозға барып сыҡҡаны юҡ, шефлыҡ эшен юлға һалыу тураһында пароходствоның партия, профсоюз ойошмалары бер нәмә лә уйламайҙар.

Социалистик колхоз ауылында хәҙер ҙур күләмдә ҡайтанан ҡороу эштәре уҙа. Техниканың үҫеүе нигеҙендә ваҡ колхоздар инде эрелә телгән яңы ҡеүәтле ауыл хужалығы артелдәренә берләшәләр. Был осорҙа производство эштәрен планлаштырыуҙа, техника базаһын киңәйтеүҙә, агрономия фәненең яңы ҡаҙаныштарын индереүҙә колхоздарға ярҙам айырыуса мөһим. Ошо йүнәлештә завод-фабрика коллективтарының, ҡала партия ойошмаларының колхоздар, МТС-тар, ЛЭС-тар менән бәйләнештәрен айырыуса көсәйтергә, шефлыҡ эшен йәнләндереп ебәрергә кәрәк. Ҡала ойошмаларының ауылдарға үҙҙәренең иң яҡшы әҙерлекле ойоштороусыларын ебәреп, ВКП(б)-ның ауыл райкомдарында, колхоз партия ойошмаларында үҙҙәренең бай тәжрибәләре менән уртаҡлашыуҙары колхоз ауылының үҫешендә ҡайтә ҙур роль уйнаясаҡ.

Республикабыҙҙың колхоздарында, МТС-тарында электрлаштырыу эштәре бик артта ҡалып килә әле. Был эштә ҡырҡа һындырыш яһарға кәрәк. Шефлыҡ итеүсе ойошмалар ауылда Ильич лампалары тоҡандырыу өсөн специалистар ебәреү, төҙөлөш материалдары етештереүҙе ойоштороу һәм ГЭС төҙөлөштәрен планлаштырыу юлы менән бик ҙур ярҙамдар күрһәтә алалар. Ҡаланан ауылға ваҡытлыса ғына түгел, ә даими эшкә специалистар, етәксе работниктарҙы ебәреүҙе ойошторорға кәрәк. Ҡалалағы күп кенә предприятиеларҙа, учреждениеларҙа йәҙҙәрсә агрономдар, врачтар, уҡытыусылар, зоотехниктар эшләйҙәр һәм уларҙың байтағы үҙ һөнәрҙәре буйынса түгел, ә икенсе эшкә файҙаланылалар. Был специалистарҙы ауылдарға ебәреп, тейешле тармаҡтарҙа файҙаланғанда күп яҡшы булыр ине.

Күп кенә промышленность предприятиелары ауыл хужалығы заказдарын үтәйҙәр. Тимер юлсылар, йылғасылар бик күп һанда ауыл хужалығы йөктәре ташыйҙар. Был коллективтар үҙҙәренең Май алды социалистик ярыш йөкләмәләренә ауыл хужалығына бәйләнешле заданиеларҙы срогынан алда үтәү тураһында махсус пункттар индерҙеләр һәм былай итеп улар бик дөрөҫ эшләнеләр. Хәҙер коллективтарҙың көсөн, иғтибарын ижади хеҙмәткә йүнәлтеп, йөкләмәләрҙең тулыһынса үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк.

Республикабыҙҙың колхоз баҫыуҙарында киң фронт менән баҫыу эштәре бара. Бөтә көс яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә туплана. Был яуаплы осорҙа ҡаланың ауылға ярҙамы айырыуса әһәмиәтле һәм был сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙә һәм юғары урожай үҫтереп алыуҙа ҙур стимул булып торасаҡ. ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттәре, завод, фабрика һәм учреждение етәкселәре, партия һәм профсоюз работниктәре быны һәр ваҡыт иҫтә тоторға, социалистик ауылға ярҙамды бөтә яҡлап көсәйтергә, уны даими һәм планлы нигеҙҙә алып барырға тейештәр.

Азербайжан ССР-ының нефть промышленносе эшселәре, инженерҙәре, техниктәре һәм хеҙмәткәрҙәренән совет халҡының бөйөк юлбашсыһы һәм учителе иптәш И. В. СТАЛИНГӘ

Ҡәҙерле Иосиф Виссарионович!

Азербайжан ССР-ының нефть промышленносе работниктәре һеҙгә, совет халҡының еңеүҙәрен ойоштороусы һәм рухландырыусы, коммунизмдең гениаль зодчийы, бөтә донъяның тыныслыҡ байрағысыһына ялҡынлы сәләм ебәрә.

Большевиктар партияһы етәкселегендә, һеҙҙең аҡыллы етәкселек итеүегеҙ арҡаһында совет халҡы халыҡ хужалығын үҫтереү һәм аяҡҡа баҫтырыуҙың һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планын үтәү өсөн көрәштә ҙур еңеүҙәргә өлгәште.

Һеҙҙең 1946 йылдың 9 февралендә һайлаусылар алдында һөйләгән телмәрегеҙҙә билдәләп үтелгән беҙҙең илдә коммунизм төҙөү эшенең бөйөк программаһы совет халҡы тарафынан уңышлы тормошҡа ашырыла.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта илебеҙ халыҡ хужалығының мөһим тармаҡтарының береһе булып торған нефть промышленносе ҡеүәтле күтәрелеш менән үҫте.

Сталинсе атайҙарса хәстәрлек менән йылытылған совет нефтселәре, беҙҙең һөйөклө Тыуған илебеҙҙе тағы ла нығытыу өсөн үҙҙәренең көсәргәнешле хеҙмәттәре менән яңы производство ҡаҙаныштарына өлгәштеләр.

Совет Азербайжаны нефтселәре совет халҡының ҙур еңеүендә үҙҙәренең хеҙмәт өлөшө булыуы менән бәхетлеләр. Республика нефть промышленносенең эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре 1950 йылда государство планын, һеҙҙең алдығыҙҙа алған социалистик йөкләмәләрен намыҫ менән үтәп сыҡтылар. «Азморнефть» берекмәһе коллективы айырыуса яҡшы эшләне.

Һеҙҙең күрһәтмәләрегеҙҙе тормошҡа ашырып, был берекмәнең эшселәре, геологтары һәм бөтә инженер-техник работниктәре Каспийға киң һөжүм итеүҙе ойошторҙолар, диңгеҙ төбөндә бер нисә нефть ятыштарына разведка яһанылар һәм үҙләштерҙеләр. 1950 йылда диңгеҙҙә эшләүсе нефтселәр, ҙур ҡыйынлыҡтарҙы еңеп, 1949 йыл менән сағыштырғанда, нефть сығарыуҙы 30,3 процентҡа үҫтерҙеләр. Һуңғы ике йылда диңгеҙ промыслаларында нефть сығарыу бер ярымға үҫте.

Республиканың нефть эшкәртеү промышленносе 1950 йылда тонок нефть продукттарын һәм май сығарыуҙы 1949 йылға ҡарағанда, 6,6 процентҡа үҫтерҙе. Нефть машиналары төҙөү заводы бер йыл эсендә нефть оборудованиелары етештереүҙе 25,9 процентҡа арттырҙылар. Азербайжан нефть промышленносенең капиталь эштәр күләме 1950 йылда, 1949 йыл менән сағыштырғанда, 20,2 процентҡа үҫте.

Һеҙгә, ҡәҙерле Иосиф Виссарионович, Азербайжан нефть промышленносенең материаль-техник базаһын нығытыуға һәм уның артабан күтәрелешенә, республикабыҙҙың башҡалаһы — Баҡуҙы төҙөкләндереүгә, тормошобоҙҙоң культураһын һәм көн-күреш шарттарын артабан яҡшыртыуға йүнәлдерелгән өҙлөкһеҙ хәстәрлек күреүегеҙ, систематик ярҙамдар күрһәтеүегеҙ һәм иғтибарығыҙ өсөн беҙ сикһеҙ күп рәхмәттәр белдерәбеҙ.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ғына Азербайжан нефтселәре өсөн 171,7 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөлдө һәм эксплуатацияға тапшырылды. Төҙөкләндерелгән яңы поселкалар барлыҡҡа килтерелде, уларҙа культура-тормош учреждениелары төҙөлөп, эксплуатацияға тапшырылды.

1950 йылда ғына Азербайжан нефтселәре оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткәндәре өсөн 50 миллион һумдан артыҡ аҡса алдылар.

Ҡәҙерле Иосиф Виссарионович! Беҙ тағы ла яҡшыраҡ эшләй алаҫағыбыҙҙы һәм илгә күберәк нефть биреп булыуын аңлайбыҙ. Сөнки быны өсөн партия, Хөкүмәт һәм һеҙ үҙегеҙ бөтә кәрәкле шарттарҙы тыуҙырҙығыҙ. Беҙ бөтә нефть тресттары, промыслалары, заводтары һәр бер бригада, һәр бер эшсенең 1950 йыл планын һәм социалистик йөкләмәләрҙе үтәүҙәренә өлгәшеп етә алмаҙыҡ. Беҙҙә геологоразведка, төҙөлөш-монтаж эштәрендә әле булһа серьез етешһеҙлектәр бар. 1951 йылда беҙҙең алдыбыҙҙа торған ҙур һәм яуаплы бурыстар республика нефть промышленносенең бөтә звеноларында ла эште яҡшыртыуҙы талап итәләр. Беҙ нефть сығарыу һәм эшкәртеүҙең темпын көсәйтергә, геологик-эҙләнеү эштәре фронтын киңәйтергә, яңы тәр нефть оборудованиеларын етештереүҙе үҙләштерергә, төҙөлөш-монтаж эштәренең күләмен байтаҡҡа ҙурайтырға һәм сифатын яҡшыртырға, алдынғы совет нефть техникаһын һәм хеҙмәтте ойоштороуҙың яңы методтарын киң индерергә тейешбеҙ. Совет Хөкүмәте тарафынан бирелгән бик ҙур материаль һәм финанс средстволарын иҫәпле һәм намыҫ менән файҙаланып, промыслаларҙың, заводтарҙың һәм төҙөлөштәрҙең эске резервтарын тулыһынса хәрәкәткә килтереп, 1951 йылды Азербайжан нефть промышленносенең яңы күтәрелеш йылы итеп билдәләүҙе үҙебеҙҙең төп бурысыбыҙ итеп ҡуйабыҙ.

Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы нефтселәренең 1951 йылда ла социалистик ярышты дауам иттереү тураһындағы тәҡдимен Азербайжан нефтселәре бер тауыштан хуплап ҡаршы алдылар. Үҙебеҙҙең алдыбыҙҙа торған бурыстарҙы тикшереп һәм үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе иҫәпкә алып, беҙ түбәндәге социалистик йөкләмәләрҙе алабыҙ:

1. Нефть сығарыуҙың йыллыҡ планын срогынан алда үтәргә һәм илгә государство планынан тыш 200 мең тонна нефть бирергә.

2. Азербайжан ССР-ының диңгеҙ ятыштарында нефть сығарыуҙы, 1950 йылға ҡарағанда, 39,6 процентҡа арттырырға.

3. Газ сығарыуҙың йыллыҡ планын 103,6 процентҡа үтәргә.

4. Биш майҙанда икенсе ҡабат эксплуатациялау һәм пластҡа баҫымды тотоу методтарын ҡулланыуҙы киңәйтергә һәм уларҙы массовый рәүештә ҡуллана башларға. 780 скважинаны компрессорҙы эксплуатациянан тәрән насослы ысул менән эксплуатациялауға күсерергә һәм йыл аҙағына тиклем тәүлегенә 4200 мең кубометр ҡыҫылған һауаны бушатырға. Бөтә редукторлы станок-качалкаларҙы автоматик рәүештә хәрәкәткә килтереү өсөн йыһазландырырға. 18 промыслала нефть һәм газ йыйыуҙың герметизацияһын төҙөүҙе тамамларға һәм эксплуатацияға тапшырырға.

5. Борауҙау планын срогынан алда үтәргә, 1951 йылдың планына ҡарағанда, борауҙауҙың бөтә төрө буйынса проходка тиҙлеген «Азнефть» берекмәһе буйынса 0,5 процентҡа, «Азморнефть» берекмәһе буйынса 3 процентҡа күтәрергә.

6. Туғыҙ газ һәм нефть майҙанын әҙерләп промышленноста эшкәртә башларға, ете майҙанда промышленный нефть һәм газ барлығын асырға.

7. Нефть эшкәртеү буйынса планды 0,3 процентҡа арттырып үтәргә һәм пландан тыш 1 процент тонок нефть продукттары, 1,2 процент майлау майҙары бирергә; тонок продукттарҙы айырып алыуҙы 0,5 процентҡа тәрәнәйтергә. Сырьеға, материалдарға һәм электр энергияһына экономия яһау өсөн киңкен көрәш алып барырға һәм планға ҡарата нормалар расходын ярыулыҡ буйынса 2,4 процентҡа, электр энергияһы буйынса 0,2 процентҡа һәм реагенттар буйынса уртаса 2 процентҡа кәметеүгә өлгәшергә. Нефть заводтарында нефть продукттарының производство юғалтыуҙарын пландағы нормаға ҡарағанда, 4 процентҡа кәметергә.

8. Нефть машиналары төҙөү заводтары буйынса государство планын билдәләнелгән номенклатурала һәм ассортиментта срогынан алда үтәргә һәм пландан тыш 10 миллион һум өҫтәмә продукция бирергә. Продукция сифатын яҡшыртырға һәм нефть оборудованиеларының яңы төрҙәрен етештереүҙе үҙләштерергә.

9. «Нефтегерметизация» тресы, Баҡу ҡалаһындағы төҙөлөш-монтаж тресы, «Азнефтезаводстрой» тресы, «Азнефть» һәм «Азморнефть» берекмәләренең төҙөлөш ойошмалары буйынса төҙөлөш-монтаж эштәре планын срогынан алда — 21 декабргә, Азербайжан территориаль төҙөлөш управлениеһе һәм «Азнефтеразведка» берекмәһе буйынса 25 декабргә үтәргә.

10. Нефть промышленносе работниктәренең торлаҡ һәм культура-тормош шарттарын артабан яҡшыртыу мақсатында, 73 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөргә һәм эксплуатацияға тапшырырға. Булған торлаҡ майҙандарының 280 мең квадрат метрына капиталь ремонт үткәрергә. Түбәндәге мөһим культура-тормош учреждениеларын төҙөп бөтөрөргә һәм эксплуатацияға тапшырырға: бер культура дворецы, 3 клуб, 5 мәктәп, 4 балалар баҡсаһы, 3 балалар яслеһе, 4 больница һәм поликлиника, бер генә санатория. 11.360 мең һум суммалыҡ коммуналь һәм культура-тормош объекттарына капиталь ремонт үткәрергә.

11. Төҙөлештә комплекслы механизациялаштырыу буйынса сараларҙы үткәреүгә айырыуса иғтибар биреп, төҙөлөш-монтаж эштәрен механизациялаштырыу буйынса билдәләнгән заданиеларҙы үтәүҙе тәьмин итергә.

12. Нефть сығарыуҙа хеҙмәт етештереүсәнлеген планға ҡарағанда, «Азнефть» берекмәһе буйынса бер процентҡа һәм «Азморнефть» берекмәһе буйынса 1,8 процентҡа; борауҙауҙа «Азнефть» берекмәһе буйынса 0,5 процентҡа, «Азморнефть» берекмәһе буйынса 1 процентҡа, «Азнефтеразведка» берекмәһе буйынса 1 процентҡа күтәрергә.

13. Нефть сығарыуҙа үҙенә төшөү хаҡын билдәләнгән планға ҡарағанда «Азморнефть» берекмәһе буйынса 1,3 процентҡа, «Азнефть» берекмәһе буйынса 0,1 процентҡа; борауҙауҙа — «Азморнефть» берекмәһе буйынса бер процентҡа, «Азнефть» берекмәһе буйынса 0,2 процентҡа һәм «Азнефтеразведка» берекмәһе буйынса бер процентҡа, нефть эшкәртеүҙә 0,5 процентҡа, нефть машиналары төҙөүҙә 0,5 процентҡа һәм республика нефть промышленносенең төҙөлөш ойошмалары буйынса 0,5 процентҡа кәметергә.

14. «Азнефтезаводы» берекмәһе буйынса 15 миллион һум, «Азнефть» берекмәһе буйынса 2 миллион һум һәм «Азнефтемаш» тресы буйынса 2 миллион һум пландан тыш файҙа алырға. Материалдарҙың һәм оборудованиеларҙың эске ресурстарынан 20 миллион һумлыҡ күләмдә мобилизовать итергә.

15. Республика нефть промышленносенең 17.930 работнигенән әҙерләргә һәм квалификацияһын күтәрергә.

16. Рационализаторлыҡ тәҡдимдәрҙе һәм уйлап табыуҙарҙы индереүҙән 35 миллион һум күләмендә экономия яһауға өлгәшергә.

Был яуаплы йөкләмәләрҙе үҙ өҫтөбөҙгә алып, беҙ уларҙы үтәү өсөн нефть промышленносе предприятиеларо эшенең һан һәм айырыуса техник-экономик күрһәткестәрен байтаҡҡа яҡшыртырға, һәр бер промыслаҙың, борауҙау контораһының, заводтың, төҙөлөштөң, цехтың, бригаданың, һәр бер эшсенең ай, квартал, йыл эсендә заданиены үтәүенә өлгәшергә кәрәк икәнен аңлайбыҙ.

Ҡәҙерле Иосиф Виссарионович!

Азербайжан нефтселәре фиҙакәр хеҙмәт менән беҙҙең ҡеүәтле Тыуған илебеҙҙең артабан экономик нығыуы эшенә яңы вклад индерерҙәр.

Һеҙгә, ҡәҙерле Иосиф Виссарионович, совет халҡының һәм бөтә прогрессив кешелектең бәхете һәм шатлығы өсөн оҙаҡ йылдар йәшәү һәм һаулыҡ теләйбеҙ.

Йәшәһен беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы Ленин — Сталин партияһы!

Совет халҡының бөйөк даһийы һәм учителенә, тыуғаныбыҙ һәм һөйөклөбеҙ Сталинға дан!

Азербайжан ССР-ы нефть промышленносенең нефть промыслалары, заводтары, ғилми-тикшеренеү һәм башҡа учреждениелары эшселәренең, инженер-техник работниктарының дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

МТС-тарҙың хужалыҡ иҫәбендәге бригадаларының ярышы

Чкалов. (ТАСС). Урал-Илек МТС-ының механизаторы туҙға һөрөлгән ерҙәрҙе һайдап тырматыуҙа хужалыҡ иҫәбендәге бригадаларҙың беренсе көн ярышыуҙарының һөҙөмтәләрен радио аша бөтә баҫыу станларына тапшырҙы.

Һәр бер тракторы нормаһын арттырып үтәп иптәш Житких бригадаһы иң алдынғы урынды алған. Тупраҡтың бер тигеҙ ыҙмауына ҡарамаҫтан, бригада сәғәт графигын аныҡ үтәй. Һәр бер станда техник ярҙам пункттары төҙөлгән. Ике сменала эшләү өсөн тракторҙарҙы комплексле оборудовать итеү бригадаларға тәүлек әйләнәһенә эшләргә мөмкинлек бирә.

Һәр бер машинаның лимит карточкаһы бар, унда эштең һәр көнгө һөҙөмтәләре яҙылып бара. Тракторсылар экономиялаған яғыулыҡта айына 3-5 көн эшләргә йөкләмә алдылар.

ХРОНИКА

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының 1951 йылдың 21 апреленә билдәләнгән сессияһы 1951 йылдың 5 июненә күсерелә.

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫ.

Май алды социалистик ярышы

Айлыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн

Черниковск ҡалаһының протез заводы коллективы 1 Май байрамын производство еңеүҙәре менән ҡаршылау өсөн әҙерләнә. Май алды социалистик ярышы цехтарҙа ҙур хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Йыйыу цехында эшләүсе стахановсы иптәш Котовтың бригадаһы заданиеларҙы арттырып үтәй. Стахановсыларҙан Перевалова, Сочнева, Червоткина, Соловьева һәм Власкина иптәштәр ҙә Май алды ярышында хеҙмәт өлгөләре бирәләр.

У. Әһлиуллин.

Беренсе Май байрамын лайыҡлы ҡаршылайбыҙ

Беҙҙең коллектив Бөтә Халыҡ байрамы — Беренсе Майҙы лайыҡлы ҡаршылау өсөн социалистик ярышҡа март айында уҡ ҡушылғайны. Еп иләү цехы эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре апрель айы планын 110 процентҡа үтәргә йөкләмә алдылар.

Хәҙер еп иләүселәр алған йөкләмәне уңышлы үтәйҙәр. Иптәш Емельянова етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы, отлично сифатлы продукциялар етештереп, 120 процент, ә иптәш Вәлиәхмәтова бригадаһы 125 процент көндәлек норма үтәлеше бирәләр.

Еп иләүселәрҙең уңышы ремонтсыларҙың намыҫлы эшләүҙәре менән ныҡ бәйләнгән. Сөнки хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн станоктар бер генә минут та туҡталып торорға тейеш түгел. Беҙҙең цех ремонтсылары был эштең әһәмиәтен яҡшы аңлайҙар һәм бушҡа тороуҙарға юл ҡуймайҙар, алған йөкләмәләрен арттырып үтәйҙәр. Шаймөхәмәтов һәм Панков иптәштәрҙең бригадалары, көн һайын бер ярым — ике норма биреп, ремонттың сифатын яҡшыртып баралар.

Т. Адамчук.

Баҫыу эштәре көндәлеге

Ирта культуралар сәсеү 4-5 көн эсендә тамамланасаҡ

Туймазы районы Нуриман исемендәге эреләтелгән колхозда быйыл юғары урожай үҫтереп алыу өсөн көрәш киң йәйелдерелде.

Колхозсылар ҡар ирей башлағас та, баҫыуҙарға сығып ҡар һыуҙары тоттолар һәм ужымдарҙы өҫтәмә ашлыҡландыра башланылар. План буйынса 70 гектар урынына, 110 гектар ужымды, гектарына 3-4 центнер көл һибеү юлы менән, өҫтәмә ашлыҡландырҙылар. Шулай уҡ күп йыллыҡ үләндәр сәселгән майҙан минераль ашламалар менән өҫтәмә ашлыҡландырылды. Баҫыу эштәренең тәүге ике көнөндә 120 гектар көҙән һөрөлгән ер тырматылды.

Колхозды быйыл Туймазы МТС-ының иптәш Шафиков етәкселек иткән трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Был бригада үҙған йылда ла трактор эштәре планын арттырып үтәп, МТС буйынса икенсе урынды алғайны. Хәҙер бөтә тракторҙар ҙа тырматыу эшенә башланылар.

Партия ойошмаһы 19 кешенән агиттколлектив ойоштороо. Агитаторҙар колхозсылар араһында политик-массовый эш алып баралар.

Бөтә колхозсылар ҙа ирта культуралар сәсеүҙе 4-5 көндә тамамларға, һәр бер гектарҙан кәмендә 15 центнер урожай үҫтереп алырға һүҙ биреп, Май алды социалистик ярышына ҡушылдылар. Һәм баҫыу эштәрен киң күләмдә йәйелдереп ебәрҙеләр.

Ф. Миңлекаева.

Ул көнлөккә ҡушылып

Әбйәлил районы Шаймөратов исемендәге колхоз члендәре (председателе иптәш Хәсбетдинов) һуңғы ике йылда тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планын тормошҡа ашырыу буйынса бик күп саралар үткәрҙеләр.

Колхоз үҙған йылда ағас ултыртыу планын тулыһынса үтәгәйне. Һәм питомникта бик күп үҫентеләр етештереп, күрше колхоздарға ла ҙур ярҙам күрһәтте.

Колхозда иптәш Мифтәхетдинов етәкселегендә 12 кешенән ағас ултыртыу звеноһы эшләй. Звено члендәре урман һәм баҡса ағастары ултыртыу ул көнлөгенә ҡушылып, уның тәүге ике-өс көнөндә 2,55 гектар майҙанда һары акация ултырттылар.

Звено члендәре Май алды социалистик ярышына ҡушылып, ағас ултыртыу эштәрен ошо көндәрҙә тулыһынса тамамлау өсөн көрәшәләр.

Ә. Йәғәфәров.

Ағас ултыртыу планын срогынан алда үтәү өсөн

Учалы. Районың урман хужалыҡтарында, колхоз баҫыуҙарында массовый рәүештә яҙғы ағас ултыртыу эштәре алып барыла. Учалы лесхозына ингән Төньяҡ Урал лесничествоһы 100 гектар майҙанда ағас ултыртыу эштәрен үткәрҙе ла инде. Ул үҙ планын 4 көндә үтәп сыҡты. Был лесничество менән иптәш Комиссарцев етәкселек итә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты тарафынан иғлан ителгән ағас ултыртыу ун көнлөгендә Учалы урмансылары үҙҙәренә бирелгән планды үтәү өсөн социалистик ярыш йәйелдерҙеләр. Иптәш Сафин етәкселек иткән Илтабан, иптәш Хомяк етәкселек иткән Өргөн лесничестволары үҙҙәренең эш пландарын срогынан алда үтәп сыҡтылар. Учалы лесхозы быйыл 560 гектар майҙанда ағас ултыртыу үткәрҙе. Беҙ уны 15 апрелгә үтәп сыҡтыҡ.

Районың колхоздарында ла ағас ултыртыу эше шулай уҡ массовый рәүештә алып барыла. Был эш айырыуса Сталин, Ворошилов исемендәге, «Ҡыҙыл Партизан» һәм «Яңыҡ» колхоздарында уңышлы үткәрелә.

Н. Скоробогатов,

Учалы лесхозының директоры.

Бойҙай һәм һоло сәсәләр

Бөрө. (Телефон аша). Районда һуңғы көндәрҙә 3000 гектар ужым өҫтәмә ашлыҡландырылды, 2000 гектар ер тырматылды.

Микоян исемендәге колхоз районда беренсе булып яҙғы сәсеүҙе башланы. Бында 15 апрелдә тракторист иптәш Халиев 8 гектар һоло сәсте. Будённый исемендәге ауыл хужалығы артелендә лә ирта культуралар сәселә башланы. Ат сәскесендә эшләүсе иптәш Самойлов тәүге 2 көндә 6 гектар бойҙай сәсте.

Районың колхоздарында 20 гектар майҙанда ирта культуралар сәселде.

Х. Сафин.

РСФСР Верховный Советенең 1951 йыл 17 апрелдәге ултырыштары тураһында ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕУ

Иртәнге ултырыш

17 апрелдә көндөҙгө 12 сәғәттә, Кремлдә, Кремлдең Ҙур дворецендә, РСФСР Верховный Советенең бишенсе ултырышы булды.

РСФСР Верховный Советы Председателе депутат **Л. Н. Соловьев** председателлек итте.

РСФСР Верховный Советы ултырышында РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджеты тураһындағы һәм РСФСР-ҙың 1950 йылда Государство бюджетенең үтәлеше йомғаҡтары тураһындағы доклад буйынса фекер алышыуҙар дауам итте.

Фекер алышыуҙарҙа депутат **А. М. Буваерова** (Лебяжьевск округы, Курган өлкәһе), депутат **П. А. Дуванов** (Воронеж-Кагановыч округы, Воронеж өлкәһе), депутат **Б. Н. Черноусов** (Смоленск ҡала округы, Смоленск өлкәһе) сығыш яһанылар.

Фекер алышыуҙар һуңынан РСФСР Верховный Советы РСФСР финанс министре депутат **И. И. Фадеевтең** йомғаҡлау һүҙен тыңланы.

Депутат **С. П. Афанасьев** тәҡдиме буйынса РСФСР Верховный Советы бюджетты раҫлауҙың түбәндәге тәртибен ҡабул итте: Государство бюджетен доходтар һәм расходтар буйынса айырым тауышҡа ҡуйырға, республика бюджетен — доходтарҙың һәм расходтарҙың дөйөм йомғаҡтары буйынса тауышҡа ҡуйырға. Государство бюджеты тураһындағы законды статьялар буйынса ҡабул итергә.

РСФСР Верховный Советы РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджетен һәм РСФСР-ҙың 1950 йылда Государство бюджетенең үтәлеше тураһындағы отчетты бер тауыштан раҫланы. «Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының 1951 йылға Государство бюджеты тураһындағы Закон» таҙа статьялар буйынса, ә һуңынан тотош бөтә рәүештә ҡабул ителде.

РСФСР Верховный Советы бынан һуң РСФСР хөкүмәтен ойоштороу тураһындағы һорауҙы ҡарауға күсте.

Депутат **М. А. Яснов** тәҡдиме буйынса РСФСР Верховный Советы, РСФСР Министрҙар Советының вәкәләттәрен сағылдырған ҡарарҙы бер тауыштан ҡабул итте һәм Министрҙар Советы председателе иптәш **Б. Н. Черноусовҡа** Хөкүмәттең — Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Министрҙар Советының составы тураһында Верховный Советҡа тәҡдим тапшырырға ҡушты.

Ошоноң менән РСФСР Верховный Советенең бишенсе ултырышы ябылды.

Киске ултырыш

17 апрелдә, киске 7 сәғәттә, Кремлдә, Кремлдең Ҙур дворецендә РСФСР Верховный Советенең алтынсы ултырышы булды.

РСФСР Верховный Советы Председателе депутат **Л. Н. Соловьев** председателлек итте.

РСФСР Верховный Советы көн тәртибендәге дүртенсе мәсьәләне тикшереүгә — РСФСР Верховный Советы Президиумының Указдарын раҫлауға күсте. Был мәсьәлә буйынса депутат **Н. И. Светлаков** доклад менән сығыш яһаны.

РСФСР Верховный Советы, «РСФСР хеҙмәтсәндәр депутаттарының ауыл һәм поселка Советтарын һайлауҙар буйынса һайлау нормалары тураһында» Верховный Совет Президиумының 1950 йылдың 2 октябрендәге Указын бер тауыштан ҡабул итте һәм РСФСР Конституцияһының 145 статьяһына тейешле үҙгәртеүҙәр индерҙе. РСФСР Верховный Советы шулай уҡ «РСФСР-ҙың Урман һәм ҡағыҙ промышленносе министерствоһын ҡайтанан ойоштороу тураһында «РСФСР Верховный Советы Президиумының 1951 йылдың 14 марттағы Указын ҡабул итте һәм РСФСР Конституцияһының 54, 69 һәм 92 статьяларына тейешле үҙгәрештәр индерҙе. Бынан һуң РСФСР Верховный Советы, РСФСР Верховный Судының айырым ағзаларының икенсе эшкә китеүе һәм бушатылыуы айҡанлы РСФСР Верховный Судына яңы ағзалар һайланы.

Бынан ары Верховный Совет көн тәртибенең түбәндәге мәсьәләһенә — РСФСР Верховный Советы Президиумын һайлауға күсте.

Депутат **И. Т. Гришин** тәҡдиме буйынса РСФСР Верховный Советы Россия Совет Федератив Социалистик республика Верховный Советы Президиумын бер тауыштан түбәндәге составта һайланы: РСФСР Верховный Советы Президиумы Председателе, Автономиялы республикалар һаны буйынса Председателдең 12 урынбаҫары, Президиум секретаре һәм РСФСР Верховный Советы Президиумының 13 ағзаһы.

Депутат **Б. Н. Черноусов**, РСФСР Верховный Советенең тапшырыуына ярашлы рәүештә, РСФСР Хөкүмәте — РСФСР Министрҙар Советы составы тураһындағы тәҡдимде Верховный Совет ҡарамағына индерҙе.

РСФСР Верховный Советы Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһы Министрҙар Советы составын бер тауыштан раҫланы.

Верховный Совет сессияһының көн тәртибендә торған мәсьәләләр ҡаралып бөттө. Верховный Совет Председателе депутат **Л. Н. Соловьев** РСФСР Верховный Советенең беренсе сессияһын ябыҡ тип иғлан итте.

РСФСР финанс министре депутат И. И. Фадеевтең йомғаклау һүҙе

Депутат иптәштәр! РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджеты һәм 1950 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһындағы отчет прениеларҙа сығыш яһаусы РСФСР Верховный Советы депутаттары тарафынан хупланды. Депутаттар беҙҙә республиканың бюджеты халыҡ хужалығының 1951 йылғы планы тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы тулыһынса ауал бирә һәм республика һәм урындағы хужалыҡтың артабан күтәрелешен һәм Россия Федерацияһы хеҙмәтсәндәренең тормош һәм культура кимәлен күтәреүҙе финанс ресурстары менән тәьмин итә, тип билдәләнеләр. РСФСР Верховный Советенең бюджет комиссияһы, государство предприятиелары һәм хужалыҡ ойошмалары табыштарынан отчисленнелар буйынса 52,8 миллион һумға, промкооперациялардан подоходный налог буйынса 14,7 миллион һумға һәм урындағы налогтар һәм доходтар буйынса 15,5 миллион һумға, бөтәһе 83 миллион һум суммаға бюджет доходын арттырыу тураһында тәҡдим индерҙе.

Бюджет комиссияһы шулай уҡ бюджет расходтарын 3,4 миллион һумға ҡыҫҡартырға һәм күрһәтелгән доходтарҙы арттырыу һәм расходтарҙы кәметеүҙән өҫтәмә ресурстарҙы, бөтәһе 86,4 миллион һум сумманы РСФСР Государство бюджетенең расходтарына ҡарағанда доходтарҙы күтәреүгә юналтергә, тәҡдим индерҙе.

РСФСР Министрҙар Советы был тәҡдимдәрҙе ҡараны һәм, бюджет комиссияһының тәҡдимдәрен ҡабул итеүҙе ул маҡсатҡа ярашлы, тип иҫәпләгәнлектән Верховный Советҡа еткерергә миңә тапшырҙы.

Депутат Афанасьев, РСФСР Урман промышленносе министерствоһы 1950 йылда производство программаһын үтәмәне, продукцияның үҙенә төшөү буйынса заданиене һәм накопление планын үтәмәне, тип күрһәтте. РСФСР-ҙың Еңел промышленносе министерствоһының ҡайһы бер предприятиелары ла изделиелар сифатын яҡшыртыу һәм ассортиментен киңәйтеү буйынса бурыстарҙы үтәмәнеләр. Урындағы промышленность министерствоһының республика предприятиелары 1950 йылда продукциялағы брактан һәм башҡа производство юғалтыуҙарынан ҙур зыян күреүгә юл ҡуйҙылар. РСФСР-ҙың Ит һәм һөт промышленносе министерствоһының май яһау предприятиелары, хеҙмәт хаҡы фондтарын артыҡ расходлау һәм производство расходтарын күтәреүсе башҡа юғалтыуҙар һөҙөмтәһендә накопленнелар буйынса байтаҡ сумманы алып еткермәнеләр. Шулай уҡ РСФСР-ҙың Аҙыҡ промышленносе министерствоһы предприятиелары эштәрендә лә етди етешһеҙлектәргә юл ҡуйылды.

Депутаттар Ладанов, Бобровников, Филимонов, Ковалевский, Горланова, Матвеева, Гусев, Борисенко, Данилова, Азилов, Брандт, Саланов, Буеверов РСФСР-ҙың айырым министерстволары һәм ведомстволары адресына тәнҡит замечаниеларен әйттеләр. Бынан РСФСР Верховный Советы ултырышында эштәре тәнҡитләнгән министерстволарҙың етәкселәре тейешле һығымталар яһарға һәм күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә практик саралар күрергә тейештәр. РСФСР Министрҙар Советы был министерстволарҙың эштәрен яҡшыртыу буйынса депутаттар тарафынан индерелгән тәҡдимдәрҙе тикшерер һәм тейешле ҡарар ҡабул итер.

Депутаттар Афанасьев, Зәғафуранов һәм Ковригина РСФСР Финанс министерствоһы һәм урындағы финанс органдары эштәрендәге етешһеҙлектәрҙе күрһәттеләр. РСФСР Финанс министерствоһы депутаттар тарафынан күрһәтелгән замечаниеларҙе дөрөҫ тип иҫәпләй һәм үҙенең эштәрен һәм республикаларҙағы урындағы финанс органдарының эштәрен яҡшыртыуға саралар күрер. Автономиялы республикаларҙың Министрҙар Советтары һәм урындағы Советтарҙың исполкомдары үҙ тарафтарынан финанс органдарының эштәренә контролде көсәйтергә һәм уларға көндәлек эштә ярҙам күрһәтергә тейештәр.

РСФСР-ҙың Государство бюджетен тикшереүҙә ҡайһы бер депутаттар бюджеттан ассигнование яһауҙы арттырыу тураһында тәҡдим индерҙеләр.

РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджеты тураһында һәм 1950 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында яһалған докладта күрһәтелгәненсә, ағымдағы йылда ҙур программала капиталь эштәр үткәреү билдәләнгән. Был программаның үтәлешен һис һүҙһеҙ тәьмин итергә кәрәк. Бында капиталь төҙөлешкә бүленгән средстволарҙы файҙаланыуҙа ныҡ экономия һаҡларға тейеш. Өҫтәмә ассигнованиелар тураһында депутаттар тарафынан ҡуйылған мәсьәләләрҙе РСФСР Министрҙар Советы һәр береһен айырым ҡараясаҡ.

Депутаттарҙан Брандт һәм Саланов ҡайһы бер ойоштороу мәсьәләләрен күтәреп сыҡтылар. Депутат Брандт төрлө министерстволар ҡарамағында торған кирбес заводтарын РСФСР-ҙың Төҙөлеш материалдары министерствоһына биреү тураһында тәҡдим индерҙе. Депутат Саланов, төҙөлеш материалдары етештерә торған башҡа ведомстволарҙың төҙөлеш материалдары етештерә торған бөтә предприятиеларен РСФСР-ҙың Төҙөлеш материалдары промышленносе министерствоһына бирергә тәҡдим итте. Депутат Саланов шулай уҡ Горький өлкәһендә үткәрелә торған ағас әҙерләүҙәрҙе бер ағас әҙерләүсе ҡарамағына туплауға тәҡдим итте. РСФСР Министрҙар Советы был тәҡдимдәрҙе тикшерер.

Депутат иптәштәр! РСФСР-ҙың 1951 йылға Государство бюджетен РСФСР Верховный Советы депутаттарының беҙҙәм хуплауҙары Россия Федерацияһы халҡтарының тормош интерестарына тулыһынса яуап биреүен күрһәтә. Государство бюджетен үтәү есеп халыҡ хужалығында булған эске ресурстарҙы һәр яҡлап мобилизовать итергә, материалдарҙы һәм аҡса средстволарын расходлауҙа ҡаты экономия режимы үткәрергә кәрәк.

РСФСР Государство бюджетенең уңышлы үтәлеүе беҙҙең һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең гениаль етәкселегендә совет халҡы тарафынан тормошҡа ашырыла барған коммунистик общество төҙөлешендә яңы еңеүҙәргә өлгәшеүгә ярҙам итер.

(**Оҙаҡ ҡул сабыуҙар**).

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Политик мәктәп өлгөлө эшләй

Партияның «Йондоҙ» колхозы (Ғафури районы) ойошмаһы эргәһендә политик мәктәп өлгөлө эшләп килә. Ул икенсе йыл эшләй һәм тыңлаусыларҙың политик һәм дөйөм белемдәренә ҡарап комплектланған. Унда бөтәһе 18 кеше уҡый. Политик мәктәп менән пропаганда эшендә күп йыллыҡ тәжрибәһе булған иптәш Мәүлетҡолов етәкселек итә.

Иптәш Мәүлетҡолов һәр бер занятиеһе ныҡлы әҙерлек менән, яңы материалдар менән тулыландырып, художестволы әҙәбиәт менән бәйләп уҙғара. Шуның һөҙөмтәһендә занятиелар һәр ваҡытта юғары идея кимәлендә, тыңлаусыларҙың актив ҡатнашлығында үтә.

Миҫал өсөн әле күптән түгел генә уҙғарылған занятиеһе алырға мөмкин. Был 12-се теманың һуңғы 5-се занятиеһенә — «Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренә» арналды.

Иптәш Мәүлетҡолов занятиеға ентекләп әҙерләнде һәм коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре тураһында газеталарҙағы бик күп материалдарҙы уҡып сыҡты. Ул дәресте үтелгән материалды ҡабатлауҙан башланы. Ҡабатлау беседа формаһында алып барылып, тыңлаусыларҙың әҙерлек менән килеүҙәрен күрһәтте.

Иптәш Мәүлетҡолов тыңлаусыларҙы Совет хөкүмәтенең коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен ҡороу тураһындағы ҡарарҙары менән таныштырҙы, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың уңышлы тамамланыуы был күрелмәгән төҙөлештәрҙе башлап ебәреүгә мөмкинлек биргәнлеген күрһәтеп үтте һәм һүҙенең аҙағында коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре коммунизмдең материаль базаһы булып торыуын әйтте.

Материалды биргәндән һуң, пропагандист өйҙә уҡып килергә әҙәбиәт һәм газета материалдарын күрһәтте. Иптәш Мәүлетҡолов тыңлаусыларҙың бирелгән материалдарҙы уҡып килеүҙәрен һәм беседала ҡатнашыуҙарын уҡыу йылы башынан уҡ контролгә алды. Уның тырышлығы һөҙөмтәһендә тыңлаусылар китап өҫтөндә эшләргә, конспект төҙөргә өйрәнделәр. Мәҫәлән, коммунист иптәш Мансуров занятиеға әҙерләнһеҙ килә һәм беседала һүлпән ҡатнаша ине. Мәүлетҡолов Мансуровҡа китап өҫтөндә эшләүгә ярҙам итте. Һөҙөмтәлә иптәш Мансуров занятиеға әҙерлек менән килә һәм беседала актив ҡатнаша башланы. Партия ойошмаһы политик мәктәпкә систематик ярҙам күрһәтә. Һөҙөмтәлә партия уҡыуы үҙ ваҡытында уҙғарыла. Бында бөтәһе 24 дәрес үткәрелде. Дәрескә йөрөш 90 процент тәшкил итә. Бөтә тыңлаусылар үтелгән материалды яҡшы үҙләштерәләр. Политик мәктәп уҡыу йылын үҙ ваҡытында юғары идея кимәлендә тамамлаясаҡ.

Х. Надиров.

1951 йылға Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының Государство бюджете тураһында ЗАКОН

Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының Верховный Советы **ҡарар итә:**

1. РСФСР Министрҙар Советы тарафынан тапшырылған 1951 йылға Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының Государство бюджетен Бюджет комиссияһының докланы буйынса ҡабул ителгән үҙгәрештәр менән раҫларға, атап әйткәндә:
доходтар буйынса 54.262.427 мең һум суммаһында,
расходтар буйынса 54.132.898 мең һум суммаһында.
Доходтарҙың расходтарға ҡарағанда 129.529 мең һум суммаһында күберәк булыуы менән һәм бынан башҡа, бюджет средстволарының 1952 йылдың 1 гинуарына күсеүсе ҡалдыҡтарын 1.624.090 мең һум суммаһында раҫларға.

2. Ошо законның 1 статьяһына ярашлы рәүештә 1951 йылға Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының республикан бюджетын:
доходтар буйынса 40.517.820 мең һум суммаһында,
расходтар буйынса 40.388.291 мең һум суммаһында.
Доходтарҙың расходтарға ҡарағанда 129.529 мең һум суммаһында күберәк булыуы менән һәм бынан башҡа, бюджет средстволарының 1952 йылдың 1 гинуарына күсеүсе ҡалдыҡтарын 371.487 мең һум суммаһында раҫларға.

3. РСФСР-ҙың республикан бюджетенән РСФСР-ҙың крайҙары, өлкәләре, республика буйһоноуындағы ҡалалары һәм Автономиялы Совет Социалистик Республикаларының 1951 йылғы бюджеттарына отчисленнеларҙы 27.564.275 мең һум суммаһында раҫларға.

4. 1951 йылға РСФСР-ҙың крайҙары, өлкәләре, республика буйһоноуындағы ҡалалары һәм Автономиялы Совет Социалистик Республикалары бюджеттарын түбәндәге суммаларҙа раҫларға:

Крайҙарҙың, өлкәләрҙең, республика буйһоноуындағы ҡалаларҙың һәм автономиялы республикаларҙың исемдәре	Мең һумдарҙа: доходтар һәм расходтар буйынса	шул иҫәптән РСФСР-ҙың республика бюджетенән отчисленнелар	бынан башҡа бюджет средстволарының 1952 йылдың 1 гинуарына күсеүсе ҡалдыҡтары
1. Алтай крайы	743.721	606.864	27.600
2. Краснодар крайы	980.219	681.466	35.300
3. Сочи ҡалаһы	39.504	12.731	450
4. Красноярск крайы	782.212	609.354	32.200
5. Приморье крайы	400.787	236.765	11.767
6. Ставрополь крайы	548.981	399.836	18.500
7. Хабаровск крайы	721.082	547.273	25.000
8. Амур өлкәһе	269.665	213.704	9.600
9. Архангельск өлкәһе	467.420	329.511	17.300
10. Астрахань өлкәһе	273.289	191.131	7.700
11. Брянск өлкәһе	456.647	364.787	16.600
12. Великие Луки өлкәһе	276.982	244.036	9.600
13. Владимир өлкәһе	443.336	310.410	13.849
14. Вологда өлкәһе	519.583	419.690	19.000
15. Воронеж өлкәһе	862.767	648.281	32.900
16. Горький ҡалаһы	312.022	103.456	3.500
17. Горький өлкәһе	756.710	547.369	28.028
18. Грозный өлкәһе	240.177	168.42	6.500
19. Иваново өлкәһе	524.287	339.721	15.000
20. Иркутск өлкәһе	516.262	372.203	17.400
21. Калининград өлкәһе	267.295	196.186	7.095
22. Калинин өлкәһе	624.397	467.438	21.419
23. Калуга өлкәһе	357.295	302.723	12.360
24. Кемерово өлкәһе	670.897	445.325	18.800
25. Киров өлкәһе	708.465	572.340	26.800
26. Кострома өлкәһе	359.736	290.145	12.100
27. Ҡырым өлкәһе	365.932	230.719	10.300
28. Севастополь ҡалаһы	94.824	72.272	1.500
29. Куйбышев ҡалаһы	236.816	66.908	2.600
30. Куйбышев өлкәһе	422.326	342.133	15.200
31. Курган өлкәһе	346.085	292.504	12.200
32. Курск өлкәһе	719.309	601.481	28.400
33. Ленинград ҡалаһы	1.846.633	469.340	28.000
34. Ленинград өлкәһе	515.523	352.280	15.200
35. Молотов ҡалаһы	179.422	71.917	2.000
36. Молотов өлкәһе	726.968	562.089	22.200
37. Мәскәү ҡалаһы	3.538.869	814.974	39.000
38. Мәскәү өлкәһе	1.766.730	992.619	48.200
39. Мурманск өлкәһе	232.988	168.613	4.600
40. Новгород өлкәһе	312.944	262.553	10.329
41. Новосибирск ҡалаһы	208.116	58.238	2.200
42. Новосибирск өлкәһе	447.633	387.919	18.261
43. Омск ҡалаһы	133.639	46.430	1.500
44. Омск өлкәһе	388.115	357.235	16.879
45. Орел өлкәһе	444.028	383.200	17.700
46. Пенза өлкәһе	461.727	366.466	16.200
47. Псков өлкәһе	269.172	237.590	8.850
48. Дондағы Ростов ҡалаһы	198.126	33.802	2.300
49. Ростов өлкәһе	747.496	536.980	25.000
50. Рязань өлкәһе	585.846	489.675	22.876
51. Саратов ҡалаһы	188.649	47.788	2.300
52. Саратов өлкәһе	587.470	480.553	21.383
53. Сахалин өлкәһе	404.168	324.178	13.000
54. Свердловск ҡалаһы	271.132	74.592	3.000
55. Свердловск өлкәһе	977.847	628.654	26.200
56. Смоленск өлкәһе	490.381	399.592	18.200
57. Сталинград ҡалаһы	180.604	77.184	2.100
58. Сталинград өлкәһе	476.150	419.444	17.400
59. Тамбов өлкәһе	496.523	405.695	19.300
60. Томск өлкәһе	292.085	226.427	11.250
61. Тува Автономиялы өлкәһе	121.832	106.785	3.150
62. Тула өлкәһе	477.869	336.059	16.300
63. Тюмень өлкәһе	471.374	406.614	19.800
64. Ульянов өлкәһе	358.298	293.198	12.350
65. Челябе ҡалаһы	174.651	42.691	2.000
66. Челябе өлкәһе	627.245	416.753	16.900
67. Чита өлкәһе	366.850	303.403	12.650
68. Чкалов өлкәһе	573.139	446.614	21.100
69. Ярославль өлкәһе	517.750	323.513	16.300
70. Татар Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	953.130	721.363	34.200
Шул иҫәптән Ҡазан ҡалаһы	176.078	54.871	1.650
71. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	966.669	774.219	33.200
72. Дағстан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	400.672	340.852	13.300
73. Бурят-Монгол Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	246.937	191.251	7.950
74. Ҡабарҙы Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	161.564	129.044	[illegible]
75. Коми Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	236.962	192.765	[illegible]
76. Мари Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	237.629	196.653	[illegible]
77. Мордва Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	333.125	299.417	[illegible]
78. Төньяҡ Осетия Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	205.313	127.605	[illegible]
79. Удмурт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	429.715	335.377	[illegible]
80. Сыуаш Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	342.765	292.349	[illegible]
81. Якут Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	427.049	384.916	[illegible]

5. 1951 йылға РСФСР-ҙың крайҙары, өлкәләре, республика буйһоноуындағы ҡалалары һәм Автономиялы Совет Социалистик Республикалары ҡалалары бюджеттарына ауыл хужалығы налогынан, халыҡтан алына торған подоходный налогтан, СССР-ҙың буйҙаҡ, ялғыҙаҡ һәм аҙ семьялы граждандарынан алына торған налогтан, машина-трактор станциялары доходтарынан, урман доходынан, подниска буйынса тапшырыла торған государство земляларынан, һәм оборотҡан налогтан отчисленнеларҙы түбәндәге күләмдәрҙә билдәләргә:

Крайҙарҙың, өлкәләрҙең, республика буйһоноуындағы ҡалаларҙың һәм автономиялы республикаларҙың исемдәре	Отчисленнелар проценты: ауыл хужалығы налогынан	халыҡтан алына торған подоходный налогтан	СССР-ҙың буйҙаҡ, ялғыҙаҡ һәм аҙ семьялы граждандарынан алына торған налогтан	машина-трактор станциялары доходтарынан	урман доходынан	[illegible]	[illegible]
1. Алтай крайы	25	70	80	25	30	80	[illegible]
2. Краснодар крайы	30	60	50	25	40	50	[illegible]
3. Сочи ҡалаһы	—	10	10	—	50	20	[illegible]
4. Красноярск крайы	35	60	50	35	40	50	[illegible]
5. Приморье крайы	40	20	35	40	50	20	[illegible]
6. Ставрополь крайы	25	80	50	25	50	80	[illegible]
7. Хабаровск крайы	100	30	30	100	50	50	[illegible]
8. Амур өлкәһе	35	80	40	40	100	40	[illegible]
9. Архангельск өлкәһе	80	50	50	100	40	60	[illegible]
10. Астрахань өлкәһе	90	70	50	100	100	50	[illegible]
11. Брянск өлкәһе	30	80	80	35	50	80	[illegible]
12. Великие Луки өлкәһе	40	80	80	50	50	90	[illegible]
13. Владимир өлкәһе	40	50	30	35	50	50	[illegible]
14. Вологда өлкәһе	60	80	80	35	40	80	[illegible]
15. Воронеж өлкәһе	25	80	70	25	50	60	[illegible]
16. Горький ҡалаһы	100	5	10	—	—	10	[illegible]
17. Горький өлкәһе	35	60	70	35	40	50	[illegible]
18. Грозный өлкәһе	80	50	50	50	50	80	[illegible]
19. Иваново өлкәһе	50	40	50	50	50	50	[illegible]
20. Иркутск өлкәһе	35	40	50	50	50	40	[illegible]
21. Калининград өлкәһе	100	60	80	100	50	50	[illegible]
22. Калинин өлкәһе	35	60	70	35	50	60	[illegible]
23. Калуга өлкәһе	35	90	80	40	50	80	[illegible]
24. Кемерово өлкәһе	45	20	20	35	40	30	[illegible]
25. Киров өлкәһе	50	70	70	25	40	80	[illegible]
26. Кострома өлкәһе	30	80	80	50	50	80	[illegible]
27. Ҡырым өлкәһе	70	60	50	40	100	50	[illegible]
28. Севастополь ҡалаһы	—	30	30	—	—	50	[illegible]
29. Куйбышев ҡалаһы	—	5	10	—	—	10	[illegible]
30. Куйбышев өлкәһе	40	70	70	35	50	70	[illegible]
31. Курган өлкәһе	40	100	70	40	50	80	[illegible]
32. Курск өлкәһе	25	80	80	25	100	80	[illegible]
33. Ленинград ҡалаһы	100	10	10	—	—	10	[illegible]
34. Ленинград өлкәһе	100	50	70	100	50	60	[illegible]
35. Молотов ҡалаһы	—	10	10	—	—	10	[illegible]
36. Молотов өлкәһе	40	50	50	25	40	50	[illegible]
37. Мәскәү ҡалаһы	100	5	10	—	50	10	[illegible]
38. Мәскәү өлкәһе	50	10	40	50	50	40	[illegible]
39. Мурманск өлкәһе	100	50	50	100	50	60	[illegible]
40. Новгород өлкәһе	50	80	80	80	50	80	[illegible]
41. Новосибирск ҡалаһы	—	10	10	—	—	10	[illegible]
42. Новосибирск өлкәһе	40	100	100	35	100	100	[illegible]
43. Омск ҡалаһы	—	10	10	—	—	10	[illegible]
44. Омск өлкәһе	40	100	100	40	100	100	[illegible]
45. Орел өлкәһе	35	80	80	35	100	80	[illegible]
46. Пенза өлкәһе	30	80	70	30	50	70	[illegible]
47. Псков өлкәһе	50	100	100	50	100	100	[illegible]
48. Дондағы Ростов ҡалаһы	100	5	5	—	—	5	[illegible]
49. Ростов өлкәһе	30	40	50	25	100	60	[illegible]
50. Рязань өлкәһе	35	80	80	35	50	80	[illegible]
51. Саратов ҡалаһы	—	5	10	—	—	10	[illegible]
52. Саратов өлкәһе	25	80	80	25	100	70	[illegible]
53. Сахалин өлкәһе	100	40	30	100	50	50	[illegible]
54. Свердловск ҡалаһы	100	5	10	—	40	10	[illegible]
55. Свердловск өлкәһе	60	30	40	50	40	30	[illegible]
56. Смоленск өлкәһе	40	80	80	50	50	70	[illegible]
57. Сталинград ҡалаһы	—	10	10	—	—	20	[illegible]
58. Сталинград өлкәһе	35	100	100	25	100	100	[illegible]
59. Тамбов өлкәһе	35	80	80	35	100	80	[illegible]
60. Томск өлкәһе	50	70	50	50	50	70	[illegible]
61. Тува Автономиялы өлкәһе	100	100	—	100	100	100	[illegible]
62. Тула өлкәһе	30	40	50	35	100	40	[illegible]
63. Тюмень өлкәһе	60	80	80	60	50	80	[illegible]
64. Ульянов өлкәһе	35	80	70	35	50	70	[illegible]
65. Челябе ҡалаһы	—	5	10	—	50	10	[illegible]
66. Челябе өлкәһе	40	20	40	50	40	30	[illegible]
67. Чита өлкәһе	60	50	40	50	100	50	[illegible]
68. Чкалов өлкәһе	35	60	60	35	100	60	[illegible]
69. Ярославль өлкәһе	35	30	40	35	50	50	[illegible]
70. Татар Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	40	70	70	40	50	70	[illegible]

(Аҙағы 3-сө биттә).

1951 йылға Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының Государство бюджете тураһында

ЗАКОН

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

Крайҙарҙың, өлкәләрҙең, республика буйһоноуындағы ҡалаларҙың һәм автономиялы республикаларҙың исемдәре	Отчисленнеләр проценте						
	ауыл хужалығы налогынан	халыҡтан алына торған подоходный налогтан	СССР-ҙың буйҙаҡ, яңғыҙ һәм аҙ балалы граждандарынан алына торған налогтан	машина-трактор станциялары доходтарынан	урман доходынан	подписка буйынса таратыла торған Государство займдарынан	оборотлан килгән налогтан
Шул иҫәптән Ҡазан ҡалаһы	—	5	10	—	—	10	2,4
71. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	50	80	80	40	50	80	5,7
72. Дағстан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	100	100	100	100	100	100	22,3
73. Бурят-Монгол Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	50	80	60	50	50	80	3,7
74. Ҡабарҙы Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	80	80	80	80	80	80	13,6
75. Коми Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	100	30	60	100	40	60	1,7
76. Мари Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	50	80	80	50	50	80	17,5
77. Мордва Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	40	100	100	40	50	80	16,9
78. Төньяҡ-Осетия Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	80	70	70	50	50	55	3,8
79. Удмурт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	50	90	80	50	50	70	1,6
80. Сыуаш Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	40	80	80	40	50	80	13,5
81. Яҡут Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы	100	100	100	100	100	100	32,0

6. 1951 йылға РСФСР крайҙарының, өлкәләренең, республика буйһоноуындағы ҡалаларҙың һәм Автономиялы Совет Социалистик Республикаларҙың бюджеттарына отчисленнеләр билдәләргә:

а) Тауарлыҡһыҙ операцияларҙан алынасаҡ налогтан 100 процент.

б) Яңғыҙаҡ хужалыҡтарҙың аттарына государство налогынан 75 процент.

в) Колхоздарҙан алынасаҡ подоходный налогтан 35 процент.

7. РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетенең үтәлеше тураһындағы отчетты доходтар буйынса 53.698.304 мең һум суммаһында һәм расходтар буйынса 53.200.028 мең һум суммаһында, доходтарҙың расходтарға ҡарағанда 498.276 мең һумға артығыраҡ булыуы менән һәм бынан тыш бюджет средстволарының 1951 йылдың 1 ғинуарына күсеүсе ҡалдыҡтарын 1.617.270 мең һум суммаһында раҫларға.

РСФСР Верховный Советы Президиумының Председателе М. ТАРАСОВ.

РСФСР Верховный Советы Президиумы Секретаре И. ЗИМИН.

Мәскәү, Кремль.
17 апрель, 1951 йыл.

РСФСР Верховный Советы Президиумын һайлау тураһында

Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының Верховный Советы ҡарар итә:

РСФСР Верховный Советы Президиумын түбәндәге составта һайларға:

РСФСР Верховный Советы Президиумы Председателе

Тарасов Михаил Петрович — Молотов өлкәһе, Краснокамск һайлау округынан депутат.

РСФСР Верховный Советы Президиумы Председателенең урынбаҫарҙары

Динмөхәмәтов Ғәли Афзалетдин улы — Татар АССР-ы, Бөгелмә һайлау округынан депутат.

Зағафуранов Файзерахман Зағафуран улы — Башҡорт АССР-ы, Ҡыйғы һайлау округынан депутат.

Батырмурзаев Абдулгамид Нухаевич — Дағстан АССР-ы, Махачкала һайлау округынан депутат.

Цыремпилон Доржи Цыремпилович — Бурят-Монгол АССР-ы, Улан-Удэ һайлау округынан депутат.

Тлостанов Калимет Тутович — Ҡабарҙы АССР-ы, Сталин һайлау округынан депутат.

Вахнин Николай Дмитриевич — Коми АССР-ы, Сыктывкар һайлау округынан депутат.

Щербаков Прохор Васильевич — Мари АССР-ы, Ронгинск һайлау округынан депутат.

Селюкин Михаил Осипович — Мордва АССР-ы, Атяшевск һайлау округынан депутат.

Тотоев Виктор Сосланбекович — Төньяҡ Осетия АССР-ы Орджоникидзе һайлау округынан депутат.

Чирков Викентий Николаевич — Удмурт АССР-ы, Глазовск һайлау округынан депутат.

Андреева Зоя Ананьевна — Сыуаш АССР-ы, Канаш һайлау округынан депутат.

Данилова Анастасия Петровна — Яҡут АССР-ы, Яҡут Үҙәк һайлау округынан депутат.

РСФСР Верховный Советы Президиумының секретаре

Зимин Иван Николаевич — Калинин өлкәһе, Ржев һайлау округынан депутат.

РСФСР Верховный Советы Президиумының члендәре

Бездомов Григорий Андреевич — Силәбе өлкәһе, Полтава һайлау округынан депутат.

Бузина Пелагея Сергеевна — Владимир өлкәһе, Муром һайлау округынан депутат.

Гусев Михаил Ильич — Кемерово өлкәһе, Киселев һайлау округынан депутат.

Ладанов Петр Федорович — Ленинград ҡалаһы, Мәскәү һайлау округынан депутат.

Маслов Василий Алексеевич — Воронеж өлкәһе, Грибановск һайлау округынан депутат.

Пантиков Петр Петрович — Краснодар крайы, Армавир ауыл һайлау округынан депутат.

Прокофьев Василий Андреевич — Мурманск өлкәһе, Кандалакша һайлау округынан депутат.

Пушнова Клавдия Ивановна — Брянск өлкәһе, Новозыбково ауыл һайлау округынан депутат.

Саланов Алексей Михайлович — Горький өлкәһе, Арзамас һайлау округынан депутат.

Соколов Алексей Гаврилович — Смоленск өлкәһе, Демидовка һайлау округынан депутат.

Степанова Клавдия Васильевна — Ярослав өлкәһе, Ярослав ауыл һайлау округынан депутат.

Цветкова Вера Семеновна — Иваново өлкәһе, Фурманов һайлау округынан депутат.

Ясное Михаил Алексеевич — Мәскәү ҡалаһы, Останкино һайлау округынан депутат.

РСФСР Верховный Советы Президиумының Председателе М. ТАРАСОВ.

РСФСР Верховный Советы Президиумының Секретаре И. ЗИМИН.

Мәскәү, Кремль.
17 апрель, 1951 йыл.

РСФСР Хөкүмәтен—РСФСР Министрҙар Советын төҙөү тураһында

Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының Верховный Советы түбәндәге составта РСФСР Хөкүмәтен — РСФСР Министрҙар Советын төҙөргә ҡарар итә:

РСФСР Министрҙар Советы Председателе —
Черноусов Борис Николаевич.

РСФСР Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары —
Сафронов Арсений Михайлович.

РСФСР Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары —
Бессонов Михаил Михайлович.

РСФСР Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары —
Зуева Татьяна Михайловна.

РСФСР Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары —
Прокофьев Алексей Макарович.

Государство план комиссияһының председателе —
Чадаев Яков Ермолаевич.

Государство контроле министры —
Васильев Николай Михайлович.

Һаулыҡ һаҡлау министры —
Ковригина Мария Дмитриевна.

Кинематография министры —
Шашков Григорий Иванович.

Еңел промышленность министры —
Миротворцев Николай Николаевич.

Урман хужалығы министры —
Жуков Илья Васильевич.

Урман промышленносе министры —
Кудрявцев Александр Васильевич.

Ит һәм һөт промышленносе министры—
Смирнов Николай Иванович.

Аҙыҡ промышленносе министры —
Соколов Виктор Николаевич.

Төҙөлөш материалдары промышленносе министры —
Сухарев Георгий Иванович.

Балыҡ промышленносе министры —
Муратов Федор Николаевич.

Ауыл хужалығы министры —
Максимов Алексей Иванович.

Совхоздар министры —
Рябов Гаврила Георгиевич.

Сауҙа министры —
Макаров Михаил Иванович.

Финанс министры —
Фадеев Иван Иванович.

Юстиция министры —
Беляев Федор Архипович.

Автомобиль транспорты министры —
Куршев Александр Николаевич.

Торлаҡ-граждандар төҙөлөшө министры —
Игнатов Борис Анатольевич.

Коммуналь хужалыҡ министры —
Профорансов Дмитрий Петрович.

Урындағы промышленность министры —
Алехин Дмитрий Иванович.

Урындағы яғыулыҡ промышленносе министры —
Беляев Виктор Петрович.

Мәғариф министры —
Каиров Иван Андреевич.

Социаль тәьминәт министры —
Сухов Алексей Николаевич.

Искусство эштәре буйынса Комитет председателе —
Будаев Сергей Александрович.

Культура-ағартыу учреждениеләре эштәре буйынса Комитет председателе —
Леонтьева Екатерина Ивановна.

РСФСР Верховный Советы Президиумының Председателе М. ТАРАСОВ.

РСФСР Верховный Советы Президиумының Секретаре И. ЗИМИН.

Мәскәү, Кремль.
17 апрель, 1951 йыл.

РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ УЛТЫРЫШЫ

1951 йылға РСФСР-ҙың Государство бюджете тураһында һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы государство бюджетенең үтәлеше тураһында доклад буйынса фекер алышыуҙар

Депутат Ф. З. ЗАҒАФУРАНОВ телмәре

(Ҡыйғы һайлау округы, Башҡорт АССР-ы)

Депутат иптәштәр! Россия Федерацияһы Верховный Советенең сессияһы совет халҡының ғәйәт ҙур политик һәм хеҙмәт күтәренкелеге обстановкаһында үтә. Совет халҡы данлы большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте етәкселегендә, беҙҙең бөйөк юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ иптәш Сталиндең гениаль юлбашсылығында, һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты уңышлы үтәп, алға, коммунизмға табан үҙенең еңеүсел хәрәкәтен ныҡлы һәм ышаныслы дауам иттерә.

Бөйөк Сталин тарафынан күрһәтелгән юл буйынса барып беҙҙең илебеҙ тарихи ҡыҫҡа ваҡыт эсендә хужалыҡ һәм культура үҫешенең бөтә өлкәләрендә лә ҙур уңыштарға өлгәште. Иптәш Сталин тарафынан ҡуйылған коммунистик төҙөлөштөң яңы бурыстарын хәл итеү өсөн, илебеҙҙең ҡоролоҡло райондарында тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу, донъялағы иң ҙур гидростанцияларҙы һәм каналдарҙы ҡороу өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырылды.

Хәҙер совет халҡы 1951 йылғы халыҡ хужалығы планын үтәү һәм коммунизмдың бөйөк төҙөлөштәре тураһында хөкүмәт ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу өҫтөндә фиҙакәр хеҙмәт итә.

Беҙҙең илебеҙ халыҡ хужалығының үҫешендәге ғәйәт ҙур уңыштар большевиктар партияһының һәм Совет Хөкүмәтенең эҙмә-эҙлекле тыныслыҡ политикаһы арҡаһында өлгәшелделәр.

Советтар Союзының, беҙҙең Россия Федерацияһының халыҡ хужалығы уңышлы үҫкән һәм алға табан барған бер ваҡытта, капиталистик илдәрҙең хужалығы тәшкелекле юлы буйынса бара, ул яңы бөтә донъя һуғышын әҙерләүгә буйһондоролған. Капиталистик донъяның өҙгөләүсе ҡаршылыҡтар быға тиклем һис бер күрелмәгәнсә киҫкенләштеләр. АҠШ һәм уға бәйһондороҡло булған илдәрҙең идара итеүселәре хәл итмәҫлек ҡаршылыҡтарҙан сығыу юлын хәрби авантюраларҙан һәм эске реакцияны көсәйтеүҙән эҙләйҙәр. Америка-Англия империалистәре һуғышты әҙерләүҙән корея халҡына ҡаршы туранан-тура агрессияға күстеләр.

Ләкин яңы бөтә донъя һуғышын тоҡандырыусылар лагерена ҡаршы бөйөк Советтар Союзы етәкселегендәге тыныслыҡ һөйөүсе һәм ныҡлы барған тыныслыҡ һәм демократия көстәре тора. Тыныслыҡтың ҡеүәтле лагере һуғыш тоҡандырыусыларҙың ҡабаҡ уйҙарын емерәсәк.

Беҙҙең илебеҙҙең хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнөң уңыштары, халыҡ көнкүрешенең күтәрелеүе капиталистик ҡоролош алдында совет общество һәм государство ҡоролошонорң бөйөк өҫтөнлөктәрен асыҡ күрһәтәләр. Совет государствоһының экономик һәм финанс ҡеүәтенең артабан үҫеүе һәм ныҡыуы был өҫтөнлөктәрҙең мөһим күрһәткесе булып тора.

Советтар Союзының бөйөк уңыштары тыныслыҡты яҡлаусылар фронтын ныҡыта, уларҙа тыныслыҡ, демократия һәм социализм эшенең еңеүенә ышаныс тыуҙыра.

Тәрән аҡыллы сталинсе тыныслыҡ политикаһын бөтә совет халҡы ҡайнар яҡлай һәм яңы һуғыш тоҡандырыусыларҙың әҙләүеҙҙәренә фиҙакәр хеҙмәт менән, данлы коммунистар партияһы һәм Совет Хөкүмәте тирәһенә, бөтә прогрессив кешелектең бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталин тирәһенә үҙ сафтарын тағы ла тығыҙыраҡ туплау менән яуап бирә.

Советтар Союзының бөтә халыҡтары менән бергә, Башҡортостан республикаһының хеҙмәтсәндәре большевиктар партияһының, Совет Хөкүмәтенең һәм иптәш Сталиндең даими хәстәрлеге һөҙөмтәһендә былтыр халыҡ хужалығын һәм культураны артабан үҫтереүҙә сербәз уңыштарға өлгәштеләр.

Башҡортостан республикаһының промышленносе валовой продукция етештереү буйынса 1950 йылғы государство планын 102 процентҡа үтәне. 1949 йылға ҡарағанда продукция 22 процентҡа күберәк етештерелде.

Республикабыҙ нефтселәре ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәп, улар илебеҙгә пландан тыш йөҙәр меңләгән тонна нефть продукттары бирҙеләр.

Быйыл улар илебеҙҙең нефть промышленносе работниктары араһында социалистик ярыш инициаторҙары булып сығып алдылар. Башҡортостан нефтселәре иптәш Сталинға яҙған хаттарында 1951 йылда, үткән йылдағыға сағыштырғанда, продукция сығарыуҙы 22,1 процентҡа арттырырға һәм пландан тыш 100 мең тонна нефть бирергә йөкләмә алдылар. Республикабыҙ нефтселәре Әзербайжан ССР-ының һәм Ҡуйбышев өлкәһенең нефть промышленносе работниктарын үткән йылда башланған социалистик ярышты дауам иттерергә саҡырҙылар. Совет кешеләренең һүҙе бер ваҡытта ла эштән айырылмай. Һәм шик юҡ, Башҡортостан нефтселәре иптәш Сталинға яҙылған хатта алынған йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәйәсәктәр.

Республика промышленносенең башҡа тармаҡтарының һәм транспортының эшселәре һәм инженер-техник работниктәре, нефтселәр өлгөһөнә эйәреп, 1951 йылғы государство планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылдылар.

Республика 1950 йылда ауыл хужалығы өлкәһендә лә шундай һөҙөмтәләргә өлгәште. Башҡортостан колхозсылары, МТС һәм совхоз работниктәре яҡшы урожай үҫтереп алдылар һәм иген әҙерләүҙең государство планын срогынан алда үтәнеләр. Государствоға, 1949 йылға ҡарағанда, 18 миллион бот иген артығыраҡ тапшырылды. Колхоздар үҙ орлоҡтары менән тәьмин итәлделәр. Аҡас ултыртыуҙың государство планы һәм иң мөһим аҙыҡ-түлек культураларының береһе булған кәзгә ярыш сәсеү планы үҙ ваҡытында үтәлде. Общественный малсылыҡты күтәреүҙә лә сербәз уңыштарға өлгәшелде: продукт биреүсе малдарҙың бөтә төрҙәре буйынса ла 1940 йылғы кимәлдән уҙып кителде.

Колхозсылар, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре быйыл республика ауыл хужалығын артабан үҫтереүҙең государство планын һис шикһеҙ үтәүгә өлгәшеү өсөн көрәшәләр.

Уңыштар менән бер рәттән, беҙҙең эшебеҙҙә ҙур етешһеҙлектәр ҙа бар әле. Беҙ республика халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарын да тағы ла йылдамыраҡ күтәреү өсөн резервтарҙы һәм мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланып еткермәйбеҙ әле. Беҙҙә бөтә ауыл хужалығы культураларынан да юғары һәм тотороҡло урожай алыу бурысы ҡәнәғәтләнерлек хәл ителмәй әле. Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың общественный малсылығын үҫтереү өлкәһендә ҙур бурыстарҙы хәл итергә тейешбеҙ әле.

Финанс планын, бигерәк тә налог түләүҙәрен йыйыу буйынса планды уңышлы үтәү өсөн беҙ бөтә әмәлен дә эшләмәнек әле.

Шуны билдәләргә кәрәк, Россия Федерацияһының ҡайһы бер министерстволары, атап әйткәндә, Финанс министерствоһы ҡайһы бер ваҡыттарҙа айырым доходтарҙы пландаштырыуға дөрөҫ ҡарамай, ә был бюджеттең үтәлешенә йоғонто яһай.

РСФСР Еңел промышленность министерствоһы былтыр Башҡортостан республикаһының аяҡ кейемдәре предприятиеләре буйынса сырьеның үҙенә төшөү хаҡының ҡиблатланыуын иҫәпкә алмаған. Был ҡиблатланыу сульфицеллюза ярҙамында дубланған тиренең үҫемлек матдәһе менән дубланған тирегә алмаштырылыуы менән килеп тыуҙы. Ә үҫемлек матдәһе менән дубланған тиренең хаҡы 15 процентҡа юғарыраҡ. Промышленностың тегеү тармағы буйынса тегеүле издәлиеләрҙә массовый тегеү методикаһының үҙгәреүе менән килеп тыуған үҙенә төшөү хаҡының күтәрелеүе иҫәпкә алынманы. Тотош алғанда еңел промышленность буйынса накопленнеләр 6,5 миллион һумға артыҡ билдәләнелгәйне.

Тик беҙ бер нисә тапҡыр юллағандан һуң ғына РСФСР Финанс министерствоһы һәм Еңел промышленность министерствоһы Башҡортостан бюджетенә табыштан отчисление буйынса йыйылмаған өлөшөн бер ни тиклем компенсировать иттеләр һәм был хәлдә еңел промышленность предприятиеләре производство планын 100,4 процентҡа үтәһәләр ҙә һәм пландан тыш үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыуҙан 2.900 мең һум экономия бирһәләр ҙә, ләкин накопленнеләр планын үтәмәнеләр һәм бюджетҡа 3 миллион һумға аҡсаны кәмерәк индерҙеләр.

РСФСР Аҙыҡ промышленносе министерствоһы һатыу хаҡтарын арзанайтыу иҫәбенә Башҡорт АССР-ы аҙыҡ промышленносе предприятиеләренең накопленнеләрен үҙгәртеү күләмен билдәләгән ваҡытта 1950 йылдың 1 мартына 1950 йылда етештерелгән продукцияға хаҡтарҙы ғына арзанайтыуҙы иҫәпкә алған һәм әҙер продукцияның йыл башына күскән ҡалдыҡтарын иғтибарға алмаған. Был айҡанлы республиканың емеш-йәшелсә тармаҡтары буйынса финанс планы реаль ителеп төҙәлмәне. Шулай уҡ кондитер фабрикаһының накопленнеләре лә арттырылған. Башҡортостан республикаһы бюджете раҫланған ваҡытта башҡа сығанаҡтар иҫәбенә һәм кондитер фабрикаһы буйынса накопленнеләрҙе 908 мең һумға кәметергә һәм бюджетты үтәү тәртибендә Раевка консерва заводының оборот средстволарын етешмәүҙе тулыландырыу өсөн 1 миллион һумдан артығыраҡ аҡса бүлергә мәжбүр булды.

Шул уҡ аҙыҡ промышленносенең предприятиеләре буйынса, шулай уҡ урман промышленносе предприятиеләре буйынса 1951 йылда ла продукцияның үҙенә төшөү хаҡын пландаштырыуҙа оноондай уҡ хәл килеп тыуҙы.

Россия Федерацияһы Хөкүмәтенең күрһәтмәһе буйынса 1945 йылда Башҡортостанда умартасылыҡ совхозы ойошторолғайны. Үҙ ҡарамағында 9 умартасылыҡта урынлашҡан 770 бал ҡорто күсе булған был совхоз ошниктәр менән тәьмин ителмәгән, унда эш өсөн нормаль шарттар тыуҙырылмаған. Асылда совхозды ойоштороу тамамланмаған әле. Шуға ҡарамаҫтан, 1951 йылғы план менән совхозды төҙөүҙе тамамлауға РСФСР Аҙыҡ промышленносе министерствоһы капитал һалымдарҙы күҙҙә тотмаған.

Беҙ еңел промышленность министры иптәш Миротворцевтан, урман промышленносе министры иптәш Кудрявцевтан, финанс министры иптәш Фадеевтан урындағы бюджеттарҙың айырым доходтарын пландаштырыуҙағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙе һорайбыҙ.

Беҙ Россия Федерацияһының Аҙыҡ промышленносе министерствоһынан республикабыҙҙың аҙыҡ промышленносе предприятиеләренең эшен тамырынан яҡшыртыу кәрәклеге менән бәйләнгән башҡа күп кенә мәсьәләләр менән дә мәрәжәғәт иттек, айырым алғанда, кондитер фабрикаһын, ликер-араҡы производствоһын алҡа баҫтырыуҙа һәм Башҡортостанда яңы һыра ҡайнатыу заводын төҙөүҙе тиҙләтеүҙә ярҙам күрһәтеү тураһында юлланыҡ. Ләкин был мәсьәләләр әле булһа хәл ителмәйенсә ҡалалар. Беҙ РСФСР аҙыҡ промышленносе министры иптәш Соколовтан беҙҙең республикабыҙ аҙыҡ промышленносе предприятиеләренең эшендә тәртип булдырыуҙы һәм уларға эшлекле ярҙам күрһәтеүҙе һорайбыҙ.

Россия Федерацияһының 1951 йылға Государство бюджетын ҡарау айҡанлы мин күп кенә мәсьәләләргә иғтибар бирелеүен теләр инем. Был мәсьәләләрҙе хәл итеү Россия Федерацияһы министерстволарының һәм РСФСР Министрҙар Советенең ярҙамын талап итә.

Башҡортостан территорияһында ҙур промышленность төҙөлөшөн йәйелдереү ҡала халҡының артыуын тыуҙыра. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда яңы ҡалалар үҫеп сыҡты, иҫке, атап әйткәндә, Стәрлетамаҡ ҡалаһы йылдам үҫә. Стәрлетамаҡ ҡалаһында яҡшы ҡала транспортын ойоштороу кәрәклеге бөтә киҫкенлеге менән килеп тыуҙы. Мин бында беренсе нәүбәттә трамвай төҙөү кәрәклеген күҙҙә тотам. Был айҡанлы РСФСР Коммуналь хужалыҡ министерствоһына, Стәрлетамаҡ ҡалаһында сөнәғә буйһонған предприятиеләр менән берлектә 1952 йылда трамвай төҙөлөшөн башлау иҫәбе менән, унда 1951 йылғы планға трамвай проектлаштырыуҙы индереүҙе тапшырыуҙы һорайым. Трамвай төҙөү тураһындағы мәсьәләне хәл иткәнгә тиклем автобустар хәрәкәтен ойошторорға кәрәк. Бының өсөн Автотранспорт министерствоһына кәрәкле һанда автобустар бүлеүҙе тапшырыуҙы, ә Финанс министерствоһына был автобустарҙы һатып алыуға тейешле ассигнованиеләр биреүҙе тапшырыуҙы һорайым.

Мәжбүри ете йыллыҡ уҡытыуға күсеү, уҡыусылар контингентенең артыуы тәбиғи рәүештә мәктәп биналарында ҙур мохтажлыҡ тыуҙыра. Беҙҙең республикабыҙҙа 5.200-ҙән артығыраҡ башланғыс һәм урта мәктәп бар, уларҙа 600 меңдән артығыраҡ бала уҡый. Беҙҙең республикабыҙ бюджете буйынса халыҡ мәғарифе эшенә йыл һайын ғәйәт ҙур средстволар бүленә. Тик үткән йылда ғына был маҡсаттарға 560 миллион һум аҡса тотолдо. Башланғыс һәм урта мәктәп селтәре йыл һайын үҫә. Республиканың общественносе һәм колхоздары был эштә актив ҡатнаша.

Ләкин мәктәптәр төҙөү темпы уҡыусылар һанының үҫеү темпынан артта ҡала. РСФСР Мәғариф министерствоһы тарафынан йыл һайын пландаштырылған ҡала һәм ауыл мәктәптәре төҙөү республика талаптарын ҡәнәғәтләндермәй. Мин Мәғариф министры иптәш Каировтан 1952 йылда мәктәп төҙөлөшөнә лимиттар бүлгән ваҡытта Башҡортостанда мәктәп биналары менән килеп тыуған хәлде иҫәпкә алыуҙы һәм был мөһим бурысты хәл итеүҙә практик ярҙам күрһәтеүҙе һорайым.

Депутат иптәштәр! РСФСР Министрҙар Советы тарафынан Верховный Совет ҡарамағына һәм раҫлауына тапшырылған 1951 йылға Россия Федерацияһының Государство бюджеты Россия Совет Федератив Социалистик Республикаһының халыҡ хужалығының, культураһының, шулай уҡ бөтә милләттәрҙәге хеҙмәтсәндәренең материаль көн-күрешенең артабан йылдам үҫеүе тураһында большевиктар партияһының һәм Совет Хөкүмәтенең арымай-талмай хәстәрлек күреүен асыҡ раҫлау булып тора. Республика Верховный Советенең Бюджет комиссияһы тарафынан индерелгән төҙәтеүҙәрҙе иҫәпкә алып, 1951 йылға РСФСР Государство бюджетын һәм РСФСР-ҙың 1950 йылғы Государство бюджетенең үтәлеше тураһындағы отчетты раҫлау хаҡындағы тәҡдимде мин яҡлайым.

Депутат иптәштәр! Совет Башҡортостанының хеҙмәтсәндәре, беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙҙең бөтә халҡы кеүек үк, беҙҙең Совет социалистик государствобыҙҙың ҡеүәтен артабан нығытыуҙың, Тыуған илебеҙ халыҡтарының көн-күрешен һәм культураһын күтәреүҙең, бөтә донъяла тыныслыҡты нығытыуҙың боевой программаһы иткән 1951 йылға СССР Государство бюджете тураһында һәм Тыныслыҡты Яҡлау тураһында СССР Верховный Советенең Закондарын ғәйәт ҙур шатлыҡ һәм ғорурлыҡ менән ҡаршыланылар. Башҡортостан хеҙмәтсәндәре 1951 йылда беҙҙең республикабыҙ халыҡ хужалығының һәм культураһының бөтә тармаҡтарын да тағы ла ҡеүәтлерәк күтәрелешенә өлгәшеү өсөн көсөргәнешле хеҙмәт итәләр.

Йәшәһен беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙ — Совет Социалистик Республикалар Союзы!

Йәшәһен беҙҙең бөтә еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы — Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) партияһы!

Йәшәһен совет халҡының һәм бөтә прогрессив кешелектең бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталин! (Оҙаҡ дауам иткән ҡул сабыуҙар).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 17 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 17 апрелдә СССР вәкиле А. Громыко председателлегендә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең чираттағы ултырышы булған.

Билдәле булыуынса, 4 апрелдә үк СССР делегацияһы үҙ-ара ҡабул итерлек нигеҙҙә килешеүгә өлгәшеү ынтылышын ҡулланып, көн тәртибенең беренсе пункты өсөн үҙ проектын индергәйне. Был проектҡа тыныслыҡты тәьмин итеүҙә Совет делегацияһы тарафынан килтерелгән мөһим проблемалар, шулай уҡ көнбайыштағы өс держава делегацияларының төп тәкдимдәре лә индерелгәйне.

Дискуссия барышында АҠШ, Великобритания һәм Франция делегациялары Совет делегацияһы тарафынан индерелгән тәкдимдәргә ныҡышмалы ҡаршы килделәр һәм көн тәртибенең 2 апрелдә индерелгән үҙ проекттарын яҡланылар.

Дискуссия барышында Совет делегацияһы көнбайыш держава вәкилдәренең 2 апрелдә индерелгән үҙ тәкдимдәрен яҡлап килтерелгән бөтә дәлилдәренең тулы нигеҙһеҙлеген асты. Был айҡанлы, АҠШ, Великобритания һәм Франция делегациялары көн тәртибенең 2 апрелендәге үҙ проекттарына ҡайһы бер үҙгәртеүҙәрҙе индерергә мәжбүр булдылар. АҠШ вәкиле Джессеп өс делегация исеменән 17 апрелдә был үҙгәртеүҙәр тураһында белдереү яһаны. Был үҙгәртеүҙәр түбәндәгеләрҙән тора:

Беренсенән, көн тәртибе проектының беренсе пункты формулировкаһының ҡоралланыуҙарға һәм ҡоралды көстәргә ҡағылған өлөшө бер аҙ тиклем үҙгәртелгән; икенсенән, Румыния, Болгария һәм Венгрия менән тыныслыҡ договорҙары тураһындағы мәсьәлә буйынса көнбайыштағы өс делегация тәкдименең редакцияһы үҙгәртелгән; өсөнсөнән, «Триест тураһындағы мәсьәлә» тигән пункт индерелгән.

АҠШ, Великобритания һәм Франция делегациялары исеменән Джессеп тарафынан көн тәртибенә проект сифатында 17 апрелдә индерелгән яңы тәкдимдең тексында, тоғош алғанда, ошолар әйтелә:

«1. Европала йәшәгән халыҡ-ара киеренкелек сәбәптәрен һәм эҙемтәләрен һәм ҡоралланыуҙарҙың һәм ҡоралды көстәрҙең йәшәп килгән кимәленә һәм ҡоралланыуҙарға һәм ҡоралды көстәргә халыҡ-ара контролде урынлаштырыу һәм уларҙы ҡыҫҡартыу өсөн СССР, Ҡушма Штаттар, Ҡушма Королевство һәм Франция тарафынан бергәләп тәкдим ителәсәк саралар; Германияны демилитаризациялауға, йәшәп килгән договор йөкләмәләрен һәм килешеүҙәрҙе үтәүгә; һуғыш һәм агрессия ҡурҡынысын бөтөрөүгә ҡағылған мәсьәләләрҙе лә индереп, Советтар Союзы, Ҡушма Штаттар, Ҡушма Королевство һәм Франция араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ысынлап та һәм оҙаҡ ваҡытҡа яҡшыртыуҙы тәьмин итеү өсөн кәрәкле булған сараларҙы ҡарау.

2. Бойондороҡһоҙ һәм демократик Австрияны азатлыҡҡа баҫтырыу өсөн договорҙы тамамлау.

3. Германия берҙәмлеген азатлыҡҡа баҫтырыуға һәм тыныслыҡ договорын әҙерләүгә ҡағылған проблемалар.

4. Румыния, Болгария һәм Венгрия менән тыныслыҡ договорҙары.

5. Триест тураһындағы мәсьәлә».

Джессеп, ә унан һуң Пароди менән Дэвис үҙҙәренең сығыштарында, ҡоралланыуҙарға һәм ҡоралды көстәргә ҡағылған үҙ формулировкаларын бер аҙ тиклем үҙгәртеп, һаналһе, Совет делегацияһының теләктәрен сериҙ яҡлайбыҙ, тигән фекер тыуҙырырға маташтылар.

Унан һуң сығыш яһаған СССР вәкиле Громыко көнбайыштағы өс держава тәкдимдәренең яңы редакцияһының асылы буйынса тәүге тәртипкә бер нисә иҫкәртеү яһаны.

Тәүге тәкдимдә яһалған үҙенең иҫкәртеүҙәрен тамамлап, Громыко, СССР делегацияһы өс державаның яңы тәкдименең күп кенә пункттары буйынса булһын, шулай уҡ был тәкдимдәрҙә булмаған, ләкин Совет делегацияһы тәкдим иткән пункттар буйынса ла өҫтәмә рәүештә фекер белдереү хоҡуҡын СССР делегацияһы үҙендә ҡалдыра, тип белдерҙе.

* * *

ПАРИЖ, 18 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе 18 апрелдә үҙ эшен дауам иттерҙе. Ултырышта АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Хәбәр ителгәненсә, 17 апрелдә көнбайыштағы өс держава делегациялары көн тәртибенең яңы проектын индергәйнеләр.

18 апрелдәге ултырышта СССР вәкиле Громыко өс державаның яңы тәкдиме айҡанлы Совет делегацияһының һорауҙарына шулай уҡ делегациялар тарафынан 17 апрелдә бирелгән яуаптарға ҡағылып, былай тип белдерҙе:

— Өс держава делегациялары тарафынан тапшырылған проектҡа ярашлы рәүештә министрҙарҙың ҡоралланыуҙар һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләгә ҡарағанда контроль тураһындағы мәсьәләне алданыраҡ тикшерергә тейеш булыуҙарын иҫәпкә алып, Совет делегацияһы, өс держава вәкилдәренең фекере буйынса нәмә өҫтәнән халыҡ-ара контроль урынлаштырылырға тейеш, тип һорағайны. 17 апрелдә Пароди, был һорауға яуап биреп, минең фекеремсә, ҡоралланыуҙар кимәленә һәм ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ихтимал ҡыҫҡартыу мөмкинлегенә контроллек итеү күҙҙә тотола, тине. Инде һуң контроль тураһындағы мәсьәлә көн тәртибендә ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләнән алда торорға тейеш, тигән һорау килеп тыуа. О нинә кәрәкһенсә түгел? Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуға ҡарағанда, көн тәртибендә контроль тураһында әлегерәк һөйләү өсөн бер ниндәй ҙә нигеҙләктәр юҡ. Башта контролдең объекты тураһында, йәғни дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһында, ә һуңынан ниндәй контроль хаҡында һөйләргә кәрәк. СССР делегацияһы тап бына ошоно тәкдим итә лә инде.

— Совет делегацияһы, — тип дауам итте Громыко, — 17 апрелдә шулай уҡ түбәндәге һорауҙы бирҙе: көн тәртибенең яңы проектының ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартыуға ҡағылған өлөшөндә һүҙ алып барылған дүрт державаның бергәләп индерелгән тәкдимдәре кемгә ебәрелергә тейеш? Был һорауға яуап биреп, Пароди 17 апрелдә, был һуңынан, министрҙар ошо мәсьәләне тикшергән ваҡытта асыҡланырға тейеш, тип белдерҙе. Ләкин беҙ, ниндәй ҙә булһа положениеның нәмә аңлатҡанлығын белмәйенсә торол, уны нисек көн тәртибенә индерергә мөмкин һуң, тип һорайбыҙ!

— Аҙаҡ килеп, тип белдерҙе унан ары Громыко, — 17 апрелдә беҙ, өс державаның яңы тәкдиме Атлантик пакт һәм төрлө илдәрҙә Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне ҡарауҙы бөтөнләйгә күҙҙә тотмай, тип күрһәткәйнек. Атлантик пакт һәм Европаның һәм Яҡын Көнсығыштың күп кенә илдәрендә Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә кеүек ошондай мөһим мәсьәләне индермәгән теләһә ниндәй көн тәртибен СССР делегацияһы ҡәнәғәтләнерлек тип таный алмай.

Громыко, Совет делегацияһы 17 апрелдә шулай уҡ, Совет делегацияһы тарафынан индерелгән аныҡ формулировка, атап әйткәндә: «Италия менән тыныслыҡ договорының Триестҡа ҡағылған өлөшөн үтәү тураһында» тигән формулировка булған бер ваҡытта өс держава вәкилдәренең «Триест тураһындағы мәсьәлә» тигән асыҡ булмаған һәм билдәһеҙ формулировканы тәкдим итеүҙәре нәмә менән аңлатыла, тигән һорауҙы ла ҡуйғайны, тип хәтергә төшөрҙө. Һәм был һорауға ла бер ниндәй ҙә асыҡ, ышандырырлыҡ яуап бирелмәне, тип билдәләне Громыко.

Великобритания вәкиле Дэвис СССР вәкиле тарафынан ҡуйылған һорауҙарға яуаптар менән сыҡты. Ул, атап әйткәндә, беренсе мәсьәләгә — контроль тураһындағы мәсьәләгә туҡталды. 17 апрелдә Пароди СССР делегацияһын, көнбайыш державалар тарафынан тапшырылған яңы формулировка ҡоралланыуҙар кимәле өҫтөнән булһын, уларҙы ихтимал мөмкин булған ҡыҫҡартыуҙар өҫтөнән дә контролде күҙҙә тота, тип ышандырырға маташһа ла, Дэвис уға ҡарағанда асығыраҡ һөйләне. Ул, ҡоралланыуҙар тураһындағы мәсьәләнең ниндәй йүнәлештә, уларҙы ҡыҫҡартыу йүнәлешендәме, йәки, киреһенсә, арттырыу йүнәлешендәме хәл ителергә тейешлеге ғөмүмән «билдәле түгел» әле, тине. Ихтимал, тип белдерҙе Дэвис, «хәҙерге ваҡытта тейешенсә ҡоралланмаған бер нисә державаның булыуы мөмкин». Шуға күрә, тине Великобритания вәкиле, өс держава тәкдимендә әйтелгән контролдә «ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартыуға түгел, ә уларҙың кимәленә контроллек итеү итеп» аңларға кәрәк. Дэвис, «ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартмайынса ла контроллек итергә мөмкин», тип раҫланы.

Өс делегация тәкдимендә Атлантик пакт һәм сит илдәр территорияларында Американың хәрби базалары тураһында ни өсөн бер нәмә лә әйтелмәй тигән һорауҙы Дэвис, гәрсә дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу тураһындағы мәсьәләгә был проблеманың тура-нан-тура мөнәсәбәте булһа ла, бер ниндәй ҙә дәлилдәр килтермәйенсә, «ситтә ҡалдырам», тип белдерҙе.

Көнбайыштағы өс держава проектында Триест тураһында ни өсөн шул тиклем билдәһеҙ формала әйтелә һәм ни өсөн был мәсьәләнең СССР делегацияһы тарафынан тәкдим ителгән асыҡ һәм аныҡ формулировкаһы ҡабул ителмәне, тип СССР делегацияһы тарафынан ҡуйылған һорауға ла Дэвис шулай уҡ асыҡ яуап бира алмаһы. Дэвис, өс делегация тәкдимдәрендә «Триест тураһындағы мәсьәлә» «нейтраль итеп» формулировать ителгән, тигән бик аңлайышһыҙ раҫлау менән генә сикләнде.

Пароди Дэвис тарафынан бирелгән «аңлатмаларға» ҡушылды. Үҙенең Британия коллегаһы кеүек үк, ул, көнбайыштағы өс держава делегацияһы ҡоралланыуҙар тураһындағы мәсьәләнең яңы формулировкаһында йәнәһе, Совет делегацияһының теләктәрен яҡлайҙар, тигән фекер тыуҙырырға маташты.

Громыко икенсе тапҡыр сығыш яһап, Дэвис менән Пароди тарафынан өс делегация тәкдимдәрен яҡлап әйтелгән дәлилдәрҙе тәнҡитләне.

— Билдәле булыуынса, — тине Громыко, — ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә хәҙергә көнгә тиклем килешелмәгән иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Шул уҡ ваҡытта был мәсьәлә буйынса, башҡа ҡайһы бер мәсьәләләр кеүек үк, өс держава вәкилдәре килешеүгә өлгәшеүҙе еңеләйтеүсе бер ниндәй ҙә аҙым яһамаңылар. Был проблеманың иң мөһим яғы буйынса беҙҙең арала килешеү юҡ әле. Беренсенән, өс держава вәкилдәре ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне әлеккесә ҡоралланыуҙар кимәле тураһындағы мәсьәләгә буйһондоралар; икенсенән, өс держава вәкилдәре **дүрт державаның** ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарауҙы күҙҙә тотҡан формулировка менән әлеккесә килешмәйҙәр, уны ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе **ғөмүмән** ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә менән алмаштыралар.

— Күреүегеҙсә, — тип белдерҙе СССР вәкиле, — өс держава делегацияһының был мәсьәләләге позицияһы 17 апрелдәге ултырышҡа тиклемге позиция кеүек үк. Шуға күрә, өс держава вәкилдәре Совет делегацияһының тәкдимдәрен яҡлайҙар, тип белдереү өсөн нигеҙлектәр юҡ. Ҡоралланыуҙар һәм ҡоралды көстәрҙең кимәле тураһындағы мәсьәлә буйынса өс держава вәкилдәре ныҡышҡан формулировка, шулай уҡ уларҙың белдереүҙәре ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне АҠШ, Великобритания һәм Францияның күмеп ҡалдырырға теләүҙәрен һәм уларҙың ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу политикаһынан баш тартырға уйламауҙарын күрһәтә. Өс держава вәкилдәренең формулировкаһын ҡабул итеү көнбайыш державаларға ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса дискуссияны йылдар буйына һуҙырға мөмкинлек бирер ине. Ләкин СССР делегацияһы ундай тәкдим менән килешә алмай, сөнки уларҙың тәкдиме тыныслыҡ интерестарында түгел.

— 1946 йылда, — тине Громыко, — БМО-ла ҡоралланыуҙарҙы дөйөм яйға һалыу һәм ҡыҫҡартыу принциптарҙе килешелгәйне. Ләкин был ҡарарҙы юҡҡа сығарҙылар. Билдәле булыуынса, көнбайыш державаларҙың ғәйебе менән был ҡарар үтәлмәне. Хәҙер беҙгә бөтә нәмәне яңынан башларға тәкдим итәләр. Күрәһең, БМО-ла үтелгән юлды яңынан ҡабатларға теләйҙәр. Ул ваҡытта резолюцияны тикшерҙеләр, эшләнеләр, уны Генеральный Ассамблея сессияһында бер тауыштан хупланылар, ә һуңынан уны практик үтәү тураһындағы мәсьәлә килеп тыуғас, был резолюция АҠШ, Великобритания һәм Франция ғәйебе менән юҡҡа сығарылды. Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне тикшереүҙең эш менән нығытылмаған ундыһыҙ һөйләнеүҙәр юлына ағылып юнәлдерелеүенә беҙ ҡаршы киләбеҙ.

«Ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартмайынса ла контроллек итергә мөмкин» тигән Дэвистең раҫлауына ҡағылып, Громыко былай тине:

— Нәмә өҫтөнән һуң контроль урынлаштырылаcаҡ?, тигән һорау килеп тыуа. Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе арттырыу өҫтөнәнме? Ихтимал, Дэвис был мәсьәләне шулай аңлайҙыр ҙа? Әгәр ҙә өс держава делегациялары быны күҙҙә тотһалар, беҙ төрлө телдәрҙә һөйләшәбеҙ булып сыға.

— Өс держава вәкилдәре тарафынан үҙ фекер ҡараштарын яҡлап бында килтерелгән дәлилдәр, — тине йомғаҡлау һүҙендә Громыко, — ышандырырлыҡ булып тормайҙар. Мәсьәлә шулай тора: йәки дүрт держава вәкилдәре ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ысынлап та серьез ҡарарға теләйҙәр йәки улар был темаға тик һөйләнеүҙәр менән генә шөғөлләнергә уйлайҙар. Совет делегацияһы дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне серьез ҡарау яғында тора. Был бурысты ғөмүмән ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы темаға буш һөйләнеүҙәр менән алмаштырыуға СССР делегацияһы ҡаршы килә. Беҙ Совет делегацияһының был позицияһына ҡарата, әле кемдә лә булһа йәшәгән асыҡ булмауҙарҙың бөтөрөлөүен телайбеҙ.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 18 апрель. (ТАСС). Корея *халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының частары Ҡытай добровольцтарының отрядтары менән берлектә 38-се параллелдән 5-15 километрға тыныҡтараҡ оборона һыҙыштарын алып барыуҙы дауам иттерәләр.*

Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүенә ҡарағанда, Халыҡ армияһының авиацияһы 16 апрелдә дошмандың 5 самолетын атаҡланы, уларҙың береһе һыуға батырылған, ә береһе — ныҡ зарарландырылған.

1946—1950 ЙЫЛДАРҒА ДҮРТЕНСЕ (ҺУҒЫШТАН ҺУҢҒЫ БЕРЕНСЕ) БИШ ЙЫЛЛЫҠ ПЛАНДЫҢ ҮТӘЛЕШ ЙОМҒАҠТАРЫ ТУРАҺЫНДА СССР ГОСУДАРСТВО ПЛАН КОМИТЕТЕНЕҢ ҺӘМ СССР ҮҘӘК СТАТИСТИКА УПРАВЛЕНИЕҺЕНЕҢ БЕЛДЕРЕҮЕНӘ СИТ ИЛДӘРҘӘГЕ

ОТКЛИКТӘР

ВЕНГРИЯ

БУДАПЕШТ, 17 апрель. (ТАСС). 17 апрелдә газеталар СССР-ҙың дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планының үтәлеш йомғаҡтары тураһында СССР Государство план комитетенең һәм Үҙәк Статистика Управлениеһенең Белдереүе тураһындағы информацияны беренсе биттәрҙә баҫып сығарғандар.

Эре хәрефтәр менән яҙылған заголовкаларҙа һәм белдереүҙең тексында газеталар һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллыҡ тарафынан ҡуйылған заданиенең байтаҡ арттырып үтәлеүен һыҙыҡ өҫтөнә алалар.

Көндеҙге «Вилагошшаг» газетаһы белдереүҙе үҙенең аңлатмалары менән тулыһынса иғлан иткән.

Биш йыллыҡ планды срогынан алда арттырып үтәү, тип яҙа газета, коммунизм төҙөүсе Совет государствоһының тыныс маҡсаттарын яңынан күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта ул Совет государствоһының үлсәп бөтөргөһөҙ көсөн һәм совет халҡының, совет планлы хужалығының ныҡлы һәләтлектәренең ни тиклем бөтмәҫ-төкәнмәҫ булыуын дуҫтарға һәм дошмандарға яңынан күрһәтә.

ПОЛЬША

ВАРШАВА, 17 апрель. (ТАСС). Польша радиоһы һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты үтәү йомғаҡтары тураһында СССР Государство план комитетенең һәм СССР Үҙәк Статистика Управлениеһенең Белдереүен 17 апрелдә бер нисә тапҡыр тапшырҙы.

Был Белдереүгә аңлатма биреп, Польша радиоһының күҙәтсеһе, СССР-ҙа һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты үтәү һөҙөмтәләре көтелгән һөҙөмтәләрҙән өҫтөн булып торалар, тип күрһәтә. Был бөйөк еңеүҙәрҙең сере Совет государствоһының социалистик ҡоролошонда. Әгәр ҙә капиталистик илдәрҙә эшселәр һәм крестьяндар хеҙмәтенең емештәре капиталисте һәм помещикте байыҡтырһа, Советтар Союзында бөтә граждандар ҙа үҙҙәренә, үҙ социалистик Тыуған илдәрен үҫтереү өсөн хеҙмәт итәләр.

Һуғыштан һуңғы совет биш йыллығын уңышлы үтәү ғәйәт ҙур халыҡ-ара әһәмиәткә эйә булып тора. Был яңы еңеү Советтар Союзының мораль һәм материаль көсөн, шуның менән бөтә тыныслыҡ лагеренең материаль һәм мораль ҡеүәтен арттыра. Был еңеү бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәшселәр тарафынан шатлыҡ менән ҡаршыланасаҡ һәм тыныслыҡ эшенең еңеүенә ышанысты тағы ла күберәк нығытасаҡ.

ЧЕХОСЛОВАКИЯ

ПРАГА, 17 апрель. (ТАСС). 17 апрелдә радиостанциялар совет халҡының гүзәл еңеүе — һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды срогынан алда тулыһынса һәм арттырып үтәү тураһындағы хәбәрҙе Чехословакияның бөтә мөйөштәренә еткерҙеләр. Һуңғы биш йыл эсендә совет промышленносенең, ауыл хужалығының, фәненең һәм культураһының үҫеше тураһында Белдереүҙә килтерелгән һандар Чехословакия халҡы тарафынан ҙур иғтибар менән ҡаршыланды.

БОЛГАРИЯ

СОФИЯ, 17 апрель. (ТАСС). СССР-ҙың 1946 — 1950 йылғы дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планын үтәү йомғаҡтары тураһында СССР Государство план комитетенең һәм СССР Үҙәк Статистика Управлениеһенең Белдереүе Болгария халыҡ республикаһында ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаршыланды.

Болгария телеграф агентствоһы СССР халыҡ хужалығының уңыштары тураһында общественный деятелдәрҙең, промышленность работниктарының, ғалимдарҙың һәм культура, искусство деятелдәренең күп һанлы белдереүҙәрен тапшыра.

СССР Государство план комитетенең һәм СССР Үҙәк Статистика Управлениеһенең Белдереүен София радиоһы 17 апрелдә ике тапҡыр тапшырҙы.

РУМЫНИЯ

БУХАРЕСТ, 17 апрель. (ТАСС). СССР-ҙың 1946 — 1950 йылғы дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планының үтәлеше йомғаҡтары тураһында Бухарест радиоһы тарафынан 17 апрелдә ике тапҡыр тапшырылған Белдереүҙе Румыния хеҙмәтсәндәре ҙур иғтибар менән тыңланылар.

МОНГОЛИЯ ХАЛЫҠ РЕСПУБЛИКАҺЫ

УЛАН-БАТОР, 17 апрель. (ТАСС). Советтар Союзында дүртенсе биш йыллыҡ планды үтәү йомғаҡтары тураһында СССР Государство план комитетенең һәм СССР Үҙәк Статистика Управлениеһенең Белдереүен Улан-Батор радиоһы 17 апрелдә бер нисә тапҡыр тапшырҙы.

ГОЛЛАНДИЯ

ГААГА, 17 апрель. (ТАСС). 17 апрелдә иртән Голландия радиоһы СССР халыҡ хужалығын азатлыҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планын үтәүҙә СССР-ҙағы уңыштары тураһындағы Белдереүҙе тапшырҙы.

Башҡаһын һуңынан һөйләшербеҙ

Партияның күптән түгел булып үткән район конференцияһы район газетаһының эшендә яңы йәнләнеү, айырыуса ҙур активлек тыуҙырҙы. Район газетаһы, бөтәһенән элек, делегаттарҙың конференцияла яһаған тәнҡит иҫкәртеүҙәрен дөйөмләштереүҙә һәм тормошҡа ашырыуҙа райондың партия һәм совет ойошмаларына ярҙам күрһәтергә тейеш. Бына яҙғы сәсеү башланды. Хәҙер ауыл хужалығы механизаторҙары һәм колхозсыларҙың социалистик ярыштарын газетала яҡтыртырға, алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен пропагандаларға кәрәк. Партия ойошмаларының яҙғы сәсеү осорондағы ойоштороу һәм массовый-политик эш тәжрибәләре газета битендә мотлаҡ урын алырға тейеш. Райондың культура һәм хужалыҡ төҙөлөшө өлкәһендәге бурыстарын уңышлы үтәүгә хеҙмәтсәндәрҙе күтәреү буйынса партия ойошмаларына, совет һәм хужалыҡ органдарына ярҙам күрһәтерлек, маҡсатҡа йүнәлешле материалдар бирергә кәрәк.

Республикабыҙҙың бөтә райондарындағы кеүек үк, шундай һәм шуға оҡшашлы бик күп төрлө мәсьәләләр Боҙаяҙ районы газеталарының алдына ла бөтә киҫкенлеге менән килеп баҫты. Бына, газета работниктәре, ошо киҫәктереү һис тә мөмкин булмаған бурыстарҙы үтәү өсөн план төҙөп конкрет эшкә башланылар.

«Сталин юлынан» газетаһы редакторы иптәш Сантов колхозлағға сығып, социалистик баҫыуҙарҙан бик күп материалдар алып ҡайтты. Велосипедҡа ултырып юлдан килгәндә үк ул материалдарҙы нисек яҙыу, алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен газетаның уҡыусыларына ниндәй формала биреү тураһында уйланып ҡайтты. Шундай уйҙарға тәрәнерәк сумып киткәндә, ул бер нисә тапҡыр юл сөҡөрҙәренә төшкәнен һәм юл туҙандәренә барып меңгәнен дә һиҙмәй ҡалды. Уға фекерен велосипедҡа йүнәлтергә тура килде. Ләкин велосипед юлды тиҙләтеү ҡоралы ғына булып торғанлығын, ә төп бурыс — райком органы булып торған газетаны маҡсатҡа йүнәлешле итеп сығарыуҙа икәнлеген редактор яҡшы белә ине. Шуға күрә ул фекерҙәрен тағы ла ошо төп бурысҡа туплаңы. Ошондай уйҙар менән педалде әйләндерә торғас ул редакцияға ҡайтып еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

Редакцияның секретаре уны яңы хәбәр менән ҡаршыланы.

— Бығаса тиклем, — тине ул, — район Советы исполкомының, партия райкомының етәкселәре редакцияға килеп тә ҡарамай торғайнылар. Хәҙер, Шакир ағай, хәлдәр үҙгәрҙе, райкомдың яңы секретаре иптәш Мөхәмәтшин редакция эшен баһалай белә торған кешеләр ахры, редакцияға бер нисә тапҡыр кешеләр ебәртеп ҡаратты, һәм үҙе лә килеп, һәр бер бүлмәне, өйҙәң бөтә ерен ентекләп ҡараны һәм бик оҡшатты булды «яҡшы, яҡшы», тип сығып китте.

Редакторҙың да күңеле күтәрелде. Бына, — тине ул, беҙҙең торҙар бушҡа китмәй бит. Редакция әйләнәһенә үҙ көсөбөҙ менән ағастарыбыҙ, күрәһең әнекәйеү 9-10 йыл ваҡыт эсендә ниндәй булып үҫтеләр. Хәҙер улар тирәләр. Беҙ ағас ултыртыу тураһында һөйләгәндә, үҙебеҙҙең эшебеҙ күптәргә өлгө булып тора, алайҙа тышҡы яғы менән генә түгел, ... бит. Үткән йылды хужалыҡ тарына тигән һәр бер тин яҡшылап һигеҙ меңгә төшөрөп ремонт өйҙе яҡшылап буятыу бушҡа китмәне. Шулай булғас беҙ өйҙәрҙе ... раһы тураһында газетабыҙҙа ... һаҡ та, етәкселәр килеп ҡарағас хәҙер инде редакция йорто ... ҡыҙарырлыҡ түгел.

Шулай һөйләшеп алғандан һуң тағы ла үҙҙәренең эштәренә ... мын киттеләр. Ләкин, оҙаҡ ... ишек асылды. Редакцияға тағы ла Мөхәмәтшин һәм башҡа ҡайһы бер ... селәр килеп инделәр.

Редактор етәкселәргә ихтирам ... ҡаршы алды һәм үҙенең нәмәләр ... теләгәнлеген һөйләп бирергә ... Ләкин иптәш Мөхәмәтшинде ни ... редакцияның эше ҡыҙыҡһындыр... Ул редакцияның бинаһын, ... төрләп үҫеп ултырған ағастарын ... са ентекләп ҡарауын дауам итте.

Эйе, тип уйланы редактор, был бөтә ерҙә хужаларса ҡарай. Тәр... теүәллекте, йыйнаҡлыҡты ярата ... кеше булһа кәрәк. Ул үҙенең ре... йортон нисек итеп бына шулай тәр... кә килтереүе тураһында һөйләргә ... рыштты. Ләкин райком секретаре *тыңларға ла теләмәне.*

— Ярай, тине ул, ҡалғаны тура... да һуңынан һөйләшербеҙ. Берәр *сәғәт... райкомға, минең кабинетҡа барығыҙ.*

Редактор, үҙенең эш планы... реп, эштә яңы установка алыу тура... да тәрән уйҙар менән райком секретаре бүлмәһенә барып инде. Ул тағы ла ... нимәләр эшләргә *уйлағанлығын һөйләп бирергә* теләне. Ләкин, райком секретаре ... үҙ фекерен әйтеп *бөтөрергә ирек бирмәне.*

— Уларҙы тураһында һуңынан һөйләшербеҙ. *Миңә квартира* кәрәк, ... өсөн редакцияны, ана райком ... ҙындағы бәләкәс бүлмәгә күсерегеҙ. ... Ә ул «бәләкәс» бүлмә райком ... ның сбруйҙарын индереп ҡуя торған ... мә ине.

Яңы секретарҙың редакцияға ... бына ошонан башланды. Ләкин беҙ ... тәш Мөхәмәтшин үҙенең редакцияға ... рашын үҙгәртер, тип ышанабыҙ.

Ғ. Нәримәнов.

Малсылыҡты үҫтереү планын үтәү өсөн көрәшәләр

Хәйбулла районының әрләтелгән «Таналыҡ» колхозында общественный малсылыҡты үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә. Ферма работниктәре малдар үрсетеүҙә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. 1950 йылда йылҡы малдары, планда ҡаралған 136 баш урынына, 143 башҡа, мөгөҙлө эре малдар 305 урынына 314 башҡа, һарыҡтар һәм кәзәләр 900 баш урынына 1017 башҡа еткерелде.

Колхоздың малсылыҡ работниктәре хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Чабан Хәсән Аслаев һарыҡтарҙы һәм кәзәләрҙе үрсетеү планын арттырып үтәгәне өсөн 1949 йылда өҫтәмә түләү иҫәбенә 11 баш кәзә, 1950 йылда 18 баш һарыҡ һәм кәзә алды. Шулай уҡ уның ике ҡыҙы фермала эшләй. Аслаевтар семьяһы 1950 йылды 2000 хеҙмәт көнө эшләне.

Йылҡысылар ҡараусы Ильяс Мәмбитов 1950 йылда 24 бейәнән 22 ҡолон алып үҫтерҙе. Уға хеҙмәт көндәренә өҫтәмә түләү тәртибендә 2 центнер бойҙай һәм 200 һум аҡса бирелде. Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Хәйбулла район Советы исполкомы иптәш Мәмбитовты 200 һум аҡса менән бүләкләне.

«Таналыҡ» колхозы общественный малсылыҡты үҫтереүҙә быйыл да уңышлы эшләй. Һарыҡ һәм кәзәләр үҫтереүҙә 1951 йыл планы 300 башҡа арттырылып үтәлде. Шулай уҡ йылҡысылар һәм мөгөҙлө эре малдар үҫтереү планын арттырып үтәү өсөн дә ныҡлы нигеҙ һалынды.

Ғ. Иҙрисов.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Общественный малсылыҡты үҫтереүгә иғтибар бирелмәй

Шишмә районы Жданов исемендәге колхозда (председателе иптәш Ғәләүетдинов) общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын үтәү өсөн кәрәк ойошторолмаған. Колхозда малдарҙы тәрбиәләүгә иғтибар бирелмәй. Һөҙөмтәлә һуңғы өс ай эсендә күп кенә һыйыр һәм сусҡалар үлде.

Малдарҙы рацион буйынса ашатыу һәм мал аҙыҡтарын әҙерләп ашатыу ойошторолмаған. Малдар ваҡытында ашатылмай, эсерелмәй, йәш малдар ҙа тейешенсә тәрбиәләнмәйҙәр. Малсылыҡ өлкәһендә гигиена һәм санитария талаптары ла үтәлмәй. Һөт айыртыу урындары һәм малдар биналары бысраҡ.

Фермала иҫәп-хисап эштәре яҡшы ойошторолоу сәбәпле, малдарҙан күпме продукт алынғанын бер кем дә белмәй.

Малсылыҡ работниктәре араһында алдынғы тәжрибәләрҙе өйрәнеү, малсылыҡты үҫтереү һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү өсөн социалистик ярыш ойошторолмаған.

Ф. Шәрәфетдинов.

Газетала баҫылмаған материалдар буйынса

Енәйәт яуаплылығына тарттырылды

Әлекке «Еңеү» колхозы (Әбйәлил районы) председателе Исмәғил Мәжитовтың общественный милекте туҙҙырыуы, систематик рәүештә эсеп-иҫереп колхозсыларҙы туҡмап йөрөүе, ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөнән көләүе, колхоздың хурт баш атын яңылыштан үлтереүе һәм артелгә башҡа төрлө зыяндар килтереүе тураһында «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы редакцияһына хат килгәйне.

Редакция был хатты тикшереп сара күреүҙәре өсөн Әбйәлил район прокуроры ҡарамағына ебәргәйне.

Тикшереү һөҙөмтәһендә Мәжитовтың бөтә енәйәтсел эштәре асылды. Ауыл хужалығы артеле Уставын боҙғаны, колхозсылар өҫтөнән көлгәне һәм башҡа енәйәттәре өсөн Мәжитов енәйәт яуаплылығына тарттырылған һәм ошо көндәрҙә хөкөм ителәсәк.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01939 Өлкә газеталары издательствоһы типографияһы. Тираж 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се йыл сығыу.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

1951 йыл № 78 (8795) 21 апрель шәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАСЫУ ЭШТӘРЕНЕҢ ТЕМПЫН ЮҒАРЫ КҮТӘРӘЙЕК! Ағас ултыртыу ун көнлөгө. В. Маликов. — Һәр бер сәғәт һәм минут эштә тулы файҙаланыла (1-се бит).

ДҮРТЕНСЕ БИШ ЙЫЛЛЫҠТЫ ҮТӘҮҘЕҢ ЙОМҒАҠТАРЫ ХЕҘМӘТСӘНДӘРҘЕ ЯҢЫ ЕҢЕҮҘӘРГӘ РУХЛАНДЫРА. Н. Севостьянов. — Киләсәктә лә уңышлы эшләү өсөн (1-се бит). З. Исмоғилов. — Тыныслыҡтың ҡаҡшамаҫ нигеҙе (1-се бит).

АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА. О. Әбделбениев. — В. И. Лениндең «Аҙыҡ-түлек налогы тураһында» тигән хеҙмәте (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. М. Мостафин. — Ҡала комитетенең аппаратында етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бетерергә (2-се бит).

Б. Мызаргалиев. — Промышленность предприятиеларе администрацияһының хужалыҡ эшмәкәрлегенә партия контроле көсәйтелһен (2-се бит).

Әҙәбиәт, искусство работниктәренең йыйылышы (3-сө бит).

СТАЛИН ПРЕМИЯЛАРЫ ЛАУРЕАТТАРЫ. З. Ишмаев. — Бөйөк дуҫлыҡ тураһындағы әҫәр (3-сө бит).

ВЛКСМ Үҙәк Комитетенең VI пленумы (3-сө бит).

Ф. Даниленко. — Быуалар һәм һыу йыйғыстарҙы төҙөү тураһында (4-се бит).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙары урынбаҫарҙарының кәңәшмәһе (4-се бит).

Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

ПРЕЗИДЕНТ ТРУМЭНДЕҢ КИЛБӘТҺЕҘ МАНЕВРҘАРЫ

Президент Трумэндең приказы менән генерал Макартур Алыҫ Көнсығышта верховный баш командующий эшенән алынды. Кореялағы интервенционистик ғәскәрҙәрҙең кисәге баш командующийы, Американың буржуаз матбуғаты ярамһыҡланып атаған, Японияның «таж кейҙерелмәгән императоры» эштән алынды.

Макартурҙың отставкаға сығыуы тураһындағы хәбәрҙе АҠШ официаль кругтары общественный фекергә еткергәндәге ярамһыҙ сенсациялыҡ, рекламалы шау-шыу иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә. Был хәбәр Вашингтон ваҡыты менән төнгө сәғәт 1-ҙә Аҡ йортта (АҠШ президентенең резиденцияһы) яһалған махсус пресс-конференцияла иғлан ителде. Ошондай төн уртаһында Аҡ йортта пресс-конференция саҡырылыу ваҡиғаһы хатта икенсе бөтә донъя һуғышы ваҡытында ла булманы. Президент Трумэн үҙенең ҡарары тураһында донъяға хәбәр итергә шул тиклем ашыҡҡан, хәттә, Америка матбуғатының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Макартур үҙе лә үҙенең эштән алыныуы тураһында армия элемтә системаһы буйынса, йәғни хәрби телеграф буйынса тапшырылған официаль приказды алғанға тиклем үк радио тапшырыуҙан белгән.

Макартурҙың отставкаға сығыуы Ҡушма Штаттар тарафынан Кореяла кисерелгән уңышһыҙлыҡтар һөҙөмтәһендә тупикка ингән Американың агрессив тышҡы политикаһы кисергән тәрән кризистең сағылышы булып тороуы тураһындағы мәсьәлә буйынса ике фекерҙең булыуы мөмкин түгел. Америка империализменең Алыҫ Көнсығыштағы, беренсе нәүбәттә Кореяға һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһына ҡарата агрессив, авантюристик политикаһының Америка халҡының иң киң ҡатламдарында тәрән ризаһыҙлыҡ тыуҙырыуы бер кемгә лә сер түгел. Был политика АҠШ-тың идара итеүсе кругтарында эске көрәштең киҫкенләшеренә, Америка-Англия блогы лагерендә ҡаршылыҡтарҙың, ыҙғыштарҙың артыуына килтерҙе.

Һорау килеп тыуа: Макартурҙың отставкаға сығыуы тирәһендә ошондай шау-шыу күтәреү Аҡ йортҡа ни өсөн кәрәк булды һуң? Макартурҙың отставкаға сығыуы айҡанлы 11 апрелдә Трумэндең радио аша яһаған сығышында был һорауға яуапты табыу еңел. Трумэндең тырышыуы Макартурҙың отставкаға сығыуы тирәһендәге шау-шыуҙың юҡҡа ғына башланмағанлығы, насар иҫәпләнгән маневрҙың күренеп тороуын асыҡ күрһәтә. Трумэн тарафынан уйланылған маневрҙың маҡсаты, беренсенән, Америка тышҡы политикаһының кризисен Макартурҙың ниндәйҙер «шәхси кризисе» итеп күрһәтеүҙән тора. Трумэн АҠШ-тың идара итеүсе кругтарының ризалығында һәм уларҙың күрһәтеүе буйынса үҙе тарафынан үткәрелгән политика өсөн яуаплылыҡты Макартурға йөкмәтергә маташа.

Ләкин был маҡсат президент Трумэн алдында торған берҙән-бер маҡсат түгел әле. Ә шул уҡ ваҡытта политик капитал йыйырға ла һәм АҠШ-тың Алыҫ Көнсығыштағы агрессив политикаһы, Корея халҡына һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһына ҡаршы әле булһа дауам иттерелгән агрессия менән күп дәрәжәлә халыҡ-ара обстановкала тыуҙырылған дөйөм киҫкенләшеү өсөн яуаплылыҡты үҙенән алып ташларға ынтыла. Ауырыу баштан таҙа башҡа ауҙарыуҙың үҙенең ғәҙәттәге методына ҡулланып, Трумэн эште, имештер Алыҫ Көнсығыштағы халыҡ-ара обстановкаһы хәҙерге киҫкенләшеү өсөн яуаплылыҡ АҠШ-тың идара итеүсе кругтарында түгел, ә тыныслыҡ һөйөүсе илдәрҙә, беренсе нәүбәттә, Советтар Союзында тора, тип күрһәтергә тырыша.

Әгәр ҙә Кореяға Америка Ҡушма Штаттарының ғәскәрҙәре түгел, ә совет ғәскәрҙәре баҫып ингән булһалар, әгәр ҙә Ҡытай территорияһы — Тайвань утрауын Америка Ҡушма Штаттарының ғәскәрҙәре түгел, ә совет ғәскәрҙәре баҫып алған булһалар, президент хаҡлы булыр ине. Ләкин Трумэндең бәхетһеҙлегә шунан тора, тап бына Америка Ҡушма Штаттарының ғәскәрҙәре президенттең приказы буйынса Кореяға баҫып ингән һәм шулай уҡ Трумэндең приказы буйынса Тайвәнды баҫып алған бер ваҡытта совет ғәскәрҙәре һәр ваҡытта совет территорияһында ҡалдылар һәм ҡалыуҙа дауам итәләр. Трумэн әфәнде был фактҡа нимәне ҡапма-ҡаршы ҡуя ала һуң? Алыҫ Көнсығыштағы хәлдең киҫкенләшеүе өсөн яуаплылыҡтың тик Трумэн әфәндегә генә, уның хөкүмәтенә генә төшөүе асыҡ түгелме ни? Шуға күрә Трумэн әфәнденең үҙ хаталары өсөн яуапте Совет хөкүмәтенә ауҙарырға маташыуы, — тик йылмайыу ғына тыуҙыра ала.

Трумэн агрессияла ғәйепләргә маташҡан Корея халҡына килгәндә, фактҡарға мөрәжәғәт итәйек.

АҠШ-тың идара итеүсе кругтары ҡушыуы буйынса лисынмансы ғәскәрҙәренең Корея Халыҡ Демократик Республикаһына һөжүм итеүҙәре, ә унан һуң Америка ҡоралды көстәренең Кореялағы интервенцияһы башланыуы бөтә донъяға билдәле. Лисынмансы ғәскәрҙәренең һәм Америка ҡоралды көстәренең агрессия яһау фактын раҫлауы, бәхәсһеҙ, бер кем тарафынан да кире ҡағылмаған документтар Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына тапшырылдылар һәм бөтә донъяға иғлан ителделәр. Күп кенә документтар Корея Халыҡ Демократик Республикаһының Сит ил эштәре министерствоһы тарафынан әҙерләнгән махсус йыйынтыҡ булып баҫылып сыҡтылар. Президент Трумэн был документация менән һис һүҙһеҙ таныш. Ҡайһы бер фактҡар тураһында хәтергә лә төшөрөп китергә мөмкин. Мәҫәлән, 1950 йылдың 9 майында АҠШ-тың экономик хеҙмәттәшлек управлениеһенең Корея бүлеге етәксеһе Джонсон әфәнде Америка конгресының вәкилдәр палатаһының ассигнованиелар буйынса Комиссияһында, Көньяҡ Кореялағы Америка ҡоралдары менән байыҡтырылған, Америка хәрби миссияһы тарафынан өйрәтелгән йөҙ мең кешенән торған армия үҙенең әҙерләнеүҙәрен тамамланы һәм теләһә ниндәй моментта һуғышты башлай ала, тип белдерҙе. Тап бына ошо ваҡытта Ли Сын Ман матбуғатта, май—июнь Корея тарихендә иң киҫкен айҙар буласаҡ, тип белдерҙе.

Шулай уҡ Джон Фостер Даллестең Көньяҡ Кореяның милли собраниеһе алдында 19 июндә, йәғни Төньяҡ Кореяға һөжүм итеүҙән 6 көн алда сығыш яһап, АҠШ Көньяҡ Кореяға бөтә кәрәкле мораль һәм материаль ярҙамды күрһәтергә әҙер, тип белдереүен дә хәтергә төшөрәйек. 1950 йылдың 20 июнендә Ли Сын Ман исеменә ебәргән хатында Даллес буласаҡ ваҡиғаларҙа Кореяға бирелгән ролде һыҙыҡ өҫтөнә алған. Ул былай тип яҙған: «Хәҙерге ваҡытта башланған ҙур драмала һеҙҙең илегеҙ уйнаясаҡ хәл иткес ролгә мин ҙур әһәмиәт бирәм».

Агрессияның, АҠШ идара итеүсе кругтарының тура-нан-тура ҡушыуы буйынса лисынмансы ғәскәрҙәр тарафынан яһалғанлығы күренгән ысын документаль мәғлүмәттәргә ҡарамаҫтан, Трумэн Америка ҡоралды көстәренең Кореяла «йәшәүҙәренен нигеҙле булыуы» тураһында үҙе тарафынан килтерелгән тезисте иҫбатлау маҡсатында Корея Халыҡ Демократик Республикаһының уйҙырма агрессияһы тураһында архивтан ялған хәбәр эҙләп тапҡан.

Президент үҙенең белдереүен нимәгә нигеҙләп төҙөй һуң? Документаль мәғлүмәттәрҙең булмауы арҡаһында, сөнки ундай мәғлүмәттәр тәбиғәттә юҡ, Трумэн, үҙе әйткәнсә, «йәшерен разведка белдереүенән алынған өҙөк» менән эш итә. Был өҙөктә «Төньяҡ Кореялағы коммунистик армияның ниндәйҙер уйлап табылған офицерының» сығышы тураһында әйтелә. Һәм ошо, әйтеүе лә көлкө булған «нигеҙҙә» Трумэн Корея халҡын, Корея Халыҡ Демократик Республикаһын агрессияла ғәйепләй.

Трумэн ҡарамағында, асыҡланғанынса, тағы ла бер «йәшерен разведка белдереүе» бар, уйла тағы ла «Алыҫ Көнсығышта ошондай уҡ уйлап табылған офицер-коммунист» ҡәүҙәләндерелә. Был исеме лә, званиеһе лә, милләте лә булмаған мифик фигура, Трумэндең раҫлауына ҡарағанда, «күптән көтөлгән бөтә донъя революцияһына» өндәгән.

Был тупаҫ һәм аҡылһыҙ ялғанлыҡ нигеҙендә Трумэн, «коммунистик лидерҙар бөтә Азияға контроллек итергә... теләйҙәр», тигән һығымта яһай.

Аҡылһыҙ ялғанлыҡтан ғына алынған ошондай «дәлилдәр» АҠШ президентен көлкө хәлгә ҡуйыуын һәм, бигерәк тә ошондай шикле «сығанаҡтарға» таяныу, үҙенең Кореялағы агрессив политикаһын аҡлау өсөн, һәм аҡларға ғына түгел, бәлки ошо уҡ агрессив политиканы артабан дауам иттереүгә юл таҙартыу өсөн дә тулы бер концепция төҙөүен күрһәтеү ҡыйыу түгел.

Алыҫ Көнсығышта уйлап ҡына алынған «коммунистик агрессия» тураһында Трумэн тарафынан төрлөсә әйтелгән уйҙырма уға ни өсөн кәрәк булды һуң? Ул бөтә донъя общественносе фекерен яңылыш юлға индереү, халыҡтарҙы алдау, АҠШ һәм уның сателлиттәре тарафынан Кореяла алып барылған баҫып алыусанлыҡ агрессив һуғышты агрессияға ҡаршы көрәш итеп... күрһәтеү өсөн кәрәк булды.

Америка интервенционистик ғәскәрҙәренең Кореяны баҫып алырға ғына түгел, бәлки Маньчжурияға баҫып инергә, Ҡытай Халыҡ Республикаһына һөжүм итергә ынтылыуҙары ла яҡшы билдәле. Корея халҡының һәм Ҡытай доброволецтәре отрядтарының героик көрәше был еңәйәтсел уйҙарҙы еҙҙе. Интервенттарҙың пландары емерелде. Тап бына был баҫып алыу пландарын тормошҡа ашырырға һәләтле булмаған өсөн дә, эшлекһеҙ Макартур эшенән алынды. Кореялағы хәлде еңеп сығырға уның һәләтһеҙлеге — Макартур карьераһының уңышһыҙ емерелеүенең сәбәбе бына ошондай.

Президент Трумэн эште нисек күрһәтә һуң? Ул эште ошолай итеп күрһәтергә тырыша: йәнәһе, Корея плацдармында һуғыш хәрәкәттәре уның, Трумэндең, һәм уның хөкүмәтенең хеҙмәте арҡаһында Корея сиктәренән тышҡа сыҡманы. Макартур, имештер, конфликтте киңәйтергә, Чан Кай-ши бандаларын Ҡытайға ташларға теләгәнлеге өсөн эшенән алынған.

Трумэн мохтажлыҡты иҙгелеккә әйләндерергә маташа. Кореялағы хәрби авантюраның емерелеүен ул «уңыш» итеп күрһәтә. Фактҡарҙы оятһыҙ, ҡырағай боҙоу юлы буйлап әленән-әле алыҫыраҡ китеп, Трумэн, Корея халҡына ҡаршы агрессия — ул өсөнсө бөтә донъя һуғышын булдырмауҙың «иң яҡшы средствоһы»... тигән раҫлауға барып етә.

Артабан, ысынлап та, барырға юл да юҡ.

Президент үҙенең кешене ышанмаслыҡ ялғанлыҡтарын әйтеү менән шул тиклем ҡыҙыҡһына, ул тағы ла һәм тағы ла уңайһыҙ хәлдә ҡала. Мәҫәлән, АҠШ Кореялағы конфликтте үҙ ихтыяры арҡаһында киңәйтмәне, тип иҫбатлап, ул: Маньчжурияны һәм Ҡытайҙың үҙен беҙ ни өсөн бомбаға тотмайбыҙ һуң? Ни өсөн беҙ Ҡытайҙың милләтселек ғәскәрҙәренә Ҡытай материгына төшөргә ярҙам итмәйбеҙ һуң? тип ике йөҙләнеп һорай.

Трумэндең беренсе һорауы тик йылмайыу ғына тыуҙыра ала. Америка авиацияһының Ҡытай территорияһына үҙенең провокацион һөжүмдәрен дауам иттереүе яҡшы билдәле бит. Синьхуа агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 13 мартта Америка самолеттары Аньдунға, Лакушаоға, Цаоань өйәҙенә бомбалар ташлағандар; 31 мартта Америка самолеттары Ҡытайҙың һауа сиктәрен 17 тапҡыр боҙғандар, 31 мартта Америка самолеттары Линьцзянь өйәҙенә 30 бомба ташлағандар, 7 апрелдә Америка бомбардировщиктәре Аньдунды яныуан бомбаға тотҡандар.

Трумэндең беренсе һорауына фактик яуап бына ошондай.

Икенсе һорауға — Чан Кай-ши бандаларын Ҡытай территорияһына төшөрөүгә килгәндә, бөтә сер был мәсьәләнең Трумэнгә бәйле булмауынан тора.

Америка халҡының тыныслыҡ теләүен, АҠШ-тың идара итеүсе кругтары тарафынан ойошторолған яңы бөтә донъя һуғышы перспективаһы менән уның тынысһыҙланыуын Трумэн бик яҡшы белә. Шуға күрә лә президент Трумэн, үҙенең тыныслыҡ теләүе һәм үҙенең бөтә уйҙары, имештер, өсөнсө бөтә донъя һуғышын булдырмауға йүнәлтелеүе тураһында раҫлауҙан арымай.

Ләкин бит... еп нескә урынынан өҙөлә. Трумэндең уйы буйынса «үҙ политикаларын үҙгәртергә» тейеш булған тыныслыҡ һөйөүсе илдәргә яуаплылыҡты йөкмәтергә маташып, президент үҙ ваҡытында Ҡытай Халыҡ Республикаһы тарафынан килтерелгән тыныс тәҡдимдәр тураһында бер генә һүҙ менән дә хәтергә төшөрмәй. Ул тик, АҠШ, йәнәһе, конфликтте тыныс юл менән яйға һалыуға һәр ваҡытта әҙер, тип буш һүҙҙәр менән генә раҫлай. Ләкин һүҙҙәр эштән башҡа үлек булып ҡала.

Шулай ҙа һорарға урын бар: конфликтте тыныс юл менән яйға һалыу өсөн АҠШ ниндәй аҙымдар яһарға уйлай һуң? Макартурҙың отставкаға сығыуынан һуң сит, Корея территорияһынан Америка ғәскәрҙәре сығарылмаҫтармы икән?

Күрһәң, юҡ. Трумэндең сығышында беҙ түбәндәге һүҙҙәрҙе табабыҙ: «Алыҫ Көнсығышта командованиене үҙгәртеү Ҡушма Штаттар политикаһын ниндәй ҙә булһа үҙгәртеүҙе аңлатмай. Беҙ һуғышты тиҙ һәм уңышлы тамамлау өсөн Кореялағы һуғышты энергиялылыҡ һәм киҫкенлек менән дауам иттерәсәкбеҙ».

Бына, күрһәң, Ҡушма Штаттар президентенең позицияһы ниндәй.

Үҙенең, йәнәһе, конфликтте тыныс юл менән яйға һалыуға, һуғышты булдырмауға ынтылыуы тураһында уның ышандырыуҙарының ике йөҙлөлөгө, уның был белдереүенән бөтә тулылығы менән күренә.

Кореялағы агрессия өсөн, яңы бөтә донъя һуғышын әҙерләү өсөн яуаплылыҡты үҙенән алып ташларға Трумэндең маташыуы юҡҡа ғына. Был яуаплылыҡтан ул бер ҡайҙа ла китә алмаҫ. Һәм уның үҙенең ике йөҙлө белдереүҙәре лә, Макартурҙы эшенән алыу тураһында сенсацион ҡарары ла ҡотҡара алмаҫ.

(«Правда» газетаһының 18 апрелдәге баш мәҡәләһе).

БАҪЫУ ЭШТӘРЕНЕҢ ТЕМПЫН ЮҒАРЫ КҮТӘРӘЙЕК!

☆ ☆

АҒАС УЛТЫРТЫУ УН КӨНЛӨГӨ

Һәр бер сәғәт һәм минут эштә тулы файҙаланыла

Мин колхоз әрләтелгәнгә тиклем дә әлекке «Дим-һарай тау» колхозында баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу буйынса төҙөлгән звено менән етәкселек итә инем. Беҙҙең звено партия һәм хөкүмәттең тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу буйынса баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу тураһындағы мөһим ҡарарын тормошҡа ашырыу юлында арымай-талмай эшләне. Беҙ 1949 йылда 3 гектар, уҙған йыл 7,5 гектар майҙанда ағас ултыртып, үҙебеҙгә бирелгән планды иң яҡшы срокта юғары сифатлы итеп үтәгәйнек.

Ләкин ағас ултыртыу буйынса колхозға бирелгән планды үтәү менән генә тынысланып ҡалманыҡ. Төп иғтибарҙы яңы ултыртылған ағастарҙы тәрбиәләүгә йүнәлттек. Ултыртылған полосаларҙы ағастарҙың рәт араларын иң элек ат культиваторы менән, унан һуң ағас төптәрен ҡул мотығалары менән йомшартып сыҡтыҡ. Шулай итеп, яҙҙан көҙгә тиклем мотығалар менән 4-5 тапҡыр, ә тракторҙар ярҙамы менән ике тапҡыр йомшартыу үткәрҙек. Шуға күрә лә йәй буйына полосалар өҫтөндә бер генә ҡый үләне лә булманы. Һөҙөмтәлә 1949 йылда ултыртҡан ағастарҙың 80 проценте, 1950 йылда ултыртҡан ағастарҙың 97 проценте тулыһынса үҫте һәм уҙған йыл ултыртҡан ҡарама ағасы 50—60 сантиметр, тополь — 75—80 сантиметр; ә яҙлап ултыртылған имән 10—12 сантиметр бейеклегендә көр генә үҫеп киттеләр.

Быйыл беҙҙең Ибрай ауыл Советы территорияһындағы «Дим-һарай тау», «Дим» һәм «Яңы сәпәш» колхоздары Салауат Юлаев исемендәге эре ауыл хужалығы артеленә берләштеләр. Хәҙер инде беҙҙә ағас полосалары ултыртыу буйынса звено ғына түгел, ә 19 кешенән торған бер бригада төҙөлдө. Бригада менән етәкселек итеүҙе колхоз правлениеһе миңә тапшырҙы. Быйыл беҙҙең колхоз 20 гектар майҙанда ағас ултыртырға тейеш. Эш тәжрибәһендә күрелгәнсә, көҙ ултыртылған ағастарға ҡарағанда, яҙ ултыртҡан ағастар яҡшыраҡ тамырланалар. Шуға күрә лә, республика буйынса уҙғарылған ун көнлөккә ҡушылып, яҙ көнө кәмендә 13 гектар майҙанда ағас ултыртыу өсөн көрәшәбеҙ. Урманда ҡар иреп башлау менән бригада члендарынан 15 кешене йәш үҫентеләр әҙерләүгә ылыҡтырҙыҡ. 4-5 көн эсендә улар 21.700 төп йәш үҫенте йыйнанылар.

Шулай уҡ беҙ колхоздың элек ултыртҡан 0,5 гектар питомнигенән 60 мең төп ултыртыу материалы әҙерләнек. Йәш үҫентеләр әҙерләү әле лә дауам итә. Бригада члендарынан күп иптәштәр был эштә намыҫ менән эшләйҙәр. Мәҫәлән, Нәфисә Шәрипова, Хәфизә Ильясова иптәштәр һәр көн һайын 2-3-әр мең төп йәш үҫенте йыйнап, нормаларын арттырып үтәйҙәр.

Шул уҡ ваҡытта беҙ уҙған йылдарҙа ултыртылған 15 гектар полосаға ремонт яһарға, уны йәш ағастар ултыртып тулыландырырға тейешбеҙ. Хәҙер ағас полосалары ултыртыу өсөн иң яҡшы ваҡыт. Шуға күрә лә беҙ һәр бер сәғәтте, һәр көндө шуға файҙаланабыҙ. Бригада, ерҙәрҙе тырматып, 6 гектар майҙанда ағас полосалары ултыртты һәм 5 гектар майҙанда әлекке полосаларға ремонт уҙғарҙы. Беҙ, ағас ултыртыу эштәрен иң яҡшы ваҡытта тамамлап, уларҙы йәй буйына яҡшы тәрбиәләйәсәкбеҙ.

В. Маликов,

Әлшәй районы, Салауат Юлаев исемендәге колхоздың ағас ултыртыу бригадаһы бригадиры.

Трактористәр смена нормаларын арттырып үтәйҙәр

Аҡъяр. (Телеграф аша). Хәйбулла МТС-ының әрләтелгән «Красный доброволец» колхозын хеҙмәтләндергән трактор бригадаһы механизаторҙары Ҡаҙанков, Назаров һәм Данилов иптәштәр баҫыу эштәре нормаһын тәүге көндәрҙән үк систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр, эштең сифаты яҡшы. Хәҙер колхозда былтыр туңға һөрөлгән бөтә майҙан тырматылып бөттө, бөтәһе 1450 гектар майҙанда дым ҡапланды.

Трактористәр иртә культураларҙы сәсәләр. Эштә агротехника талаптары ныҡ һаҡлана. Һөрөүҙә тик предплужникле һабандар ғына ҡулланыла. Трактористәрҙән Болотин, Строгов, Бакуров, Широгалеев, Сынбулатов һәм Ҡыуатов иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Иптәш Ҡыуатов 13 апрелдә тәгәрмәсле трактор менән, 9 гектар урынына, 16 гектар ер тырматты, 46 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. 12 апрелдә «ДТ—2» тракторы менән, 9 гектар урынына, 11 гектар ер һөрҙе. Тракторист иптәш Филатов норманы систематик арттырып үтәй. Ул баҫыу эштәре башланған көндән алып инде 192 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Колхоз трактор бригадаһы өсөн бөтә эш шарттарын тәьмин иткән. Баҫыу станындағы вагончиктар яҡшы йыһазландырылған, библиотека булдырылған. Трактор бригадаһына агитатор беркетелгән. Механизаторҙар араһында политик-массовый эштәр алып барыла.

В. Изәнбаев,
Р. Шәфиҡова.

ТРАКТОРИСТӘР ЯРЫШЫ

Юғары етештереүсәнлек менән

Әбйәлил МТС-ының әрләтелгән «Путь к коммунизму» колхозын хеҙмәтләндергән Осокин һәм Бармин иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадаларының трактористәре Иван Бунеевтең саҡырыуына ҡушылып, тракторҙарҙың юғары етештереүсәнле эшләүенә өлгәшергә һүҙ биргәйнеләр.

Уларҙың һүҙҙәре эштән айырылмай. Трактористәр Бармин һәм Попов иптәштәр сиҙәм һөрөүҙә көндәлек нормаларын 150 — 160 процентҡа, Перепелкин һәм Ямалов иптәштәр 120 — 130 процентҡа үтәйҙәр.

Ә. Йәғфәров.

• • •

Красноусол. (Телефон аша). Ғафури районында Фәйзуллин һәм Вәлишин иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадалары Үтәк ауыл Советы колхоздарын хеҙмәтләндерәләр.

Иптәш Фәйзуллин етәкселек иткән трактор бригадаһы Ворошилов исемендәге колхозда өс көн эсендә генә 200 гектар ер тырматты, 150 гектар майҙанда культивация үткәрҙе һәм 120 гектар һоло һәм бойҙай сәсте.

Й. Ғәлиев.

• • •

Мәләүез районы Мәләүез һәм Һуҡайлы МТС-тарының механизаторҙары. Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеев өлгөһендә социалистик ярышҡа ҡушылып, баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк йөкләмәләрҙе арттырып үтәү өсөн көрәшәләр.

Һуҡайлы МТС-ының иптәш Сарышев етәкселек иткән трактор бригадаһы «Пятилетка» колхозында ике көндә 720 гектар ер тырматты, 700 гектар культивацияланы һәм 55 гектар майҙанда иртә культуралар сәсте.

Мәләүез МТС-ының иптәш Хлопотин етәкселек иткән трактор бригадаһы Чкалов исемендәге колхозда 250 гектар майҙанда ашлыҡ сәсте. Тракторист иптәш Федотов смена нормаһын систематик рәүештә 200 — 220 процентҡа үтәй.

С. Маликов.

Һаҡмар совхозы иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы

Абҙан. (Телефон аша). Райондың Һаҡмар совхозы коллективы Май алды социалистик ярышына ҡушылып, иртә культуралар сәсеүҙе 22 апрелгә тамамларға йөкләмә алғайны. Йөкләмә срогынан алда үтәлде. Совхоз коллективы 1380 гектар урынына, 1540 гектар майҙанда бөртөклө культуралар сәсеп, планды арттырып үтәне.

Хәҙер һуңғы культуралар сәсеүгә әҙерлек алып барыла.

Д. Мәһдиев.

ДҮРТЕНСЕ БИШ ЙЫЛЛЫҠТЫ ҮТӘҮҘЕҢ ЙОМҒАҠТАРЫ ХЕҘМӘТСӘНДӘРҘЕ ЯҢЫ ЕҢЕҮҘӘРГӘ РУХЛАНДЫРА

☆

КИЛӘСӘКТӘ ЛӘ УҢЫШЛЫ ЭШЛӘҮ ӨСӨН

Өфө тимер юл бүлекселе коллективы СССР Үҙәк Статистика Управлениеһенең һәм Государство План Комитетенең һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ пландың үтәлеше тураһында белдереүен ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланы. Коллектив члендәре, биш йыллыҡ планды үтәүгә үҙҙәренең дә вкладтарын индереүҙәрен аңлап, Тыуған илебеҙҙең артабанғы экономик ныҡыуы өсөн тағы ла яҡшыраҡ эшләү өсөн һүҙ бирҙеләр.

Хәҙер бүлектең бөтә эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре Май алды социалистик ярышын киң йәйелдерҙеләр. Был ярышта комсомолецтар, йәштәр алдынғы сафта барҙылар. Өфө станцияһының паровоз депоһы йәштәре 22 рационализаторлыҡ тәҡдим яһанылар. Был тәҡдимдәрҙе производствоға индереү һөҙөмтәһендә 20 мең 275 һумлыҡ экономия алынды. Комсомолецтар инженер Ковалев методын производствоға индереүҙә актив ҡатнашалар. Инженер иптәш Әхмәтьянов депоның иң яҡшы слесарҙары Сидоров һәм Балашов иптәштәрҙең эш алымдарын өйрәнде һәм уларҙы дөйөмләштерҙе. Ә инженер-комсомолец иптәш Игнатенко йәш эшселәрҙе Ковалев методы менән таныштырҙы. Һөҙөмтәлә йәш тимер юлсылар Май алды социалистик ярышында биш йыллыҡ пландың уңышлы үтәлеүе хөрмәтенә яңы уңыштарға өлгәшәләр.

Н. Севастьянов,

Өфө тимер юл бүлекселе политбүлегенең комсомол эштәре буйынса инструкторы.

☆

ТЫНЫСЛЫҠТЫҢ ҠАҠШАМАҪ НИГЕҘЕ

СССР Статистика Управлениеһенән һәм Государство План Комитетенең һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ пландың уңышлы үтәлеүе тураһында белдереүе Өфө 8 март исемендәге тегеү фабрикаһы коллективында ҡайнар отклик тапты. Фабриканың бөтә цехтарында ла беседалар һәм митингылар булып үтте. Улар ҙа эшселәр, инженер-техник работниктәр һәм хеҙмәткәрҙәр биш йыллыҡ пландың уңышлы үтәлеүенә үҙҙәренең дә хеҙмәт вкладын индергәнлектәрен, хәҙер был уңыштар яңы еңеүҙәргә рухландырғанын һөйләнеләр.

Митингыла өтенсе цехтың өлкән механиге иптәш Ермолов былай тине:

— Һуңғы биш йыллыҡ план осоронда өлгәшкән уңыштар беҙҙе киләсәк еңеүҙәргә саҡыралар. Беҙ тағы ла яҡшыраҡ эшләргә тейешбеҙ. Быны мин яҡшы аңлайым. Ул Тыуған илебеҙ, халыҡ бәхете өсөн һәм ныҡлы тыныслыҡ булдырыу өсөн кәрәк. Мин Май алды социалистик ярышында тегеү машиналарының техник тәҙәк булмауы сәбәпле буш тороуҙарын бер генә минутҡа ла булдырмаҫҡа, коллективка яңы техниканы уңышлы үҙләштереү буйынса ярҙам итергә һүҙ бирәм.

Шулай уҡ фабриканың башҡа цехтарында ла тантаналы был ваҡиғаға арналған митингылар һәм беседалар булып үтте.

З. Исмоғилов.

☆

НЕФТСЕЛӘРҘЕҢ ХЕҘМӘТ КҮТӘРЕЛЕШЕ

Һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллыҡ пландың үтәлеше тураһындағы Государство План Комитетенең һәм Үҙәк Статистика Управлениеһенең белдереүе Ишембай нефтселәрендә тәрән шатлыҡ һәм урынлы ғорурланыу тыуҙырҙы. Ҡаланың промышленность предприятиеларында, учреждениеларында был белдереүгә арналған митингылар үткәрелә.

Өсөнсө номерлы промыслала нефтселәренең митингыһында хужалыҡ иҫәбендә эшләүсе комплекслы нефть сығарыу участкаһы мастерының ярҙамсыһы иптәш Елин һүҙ алып былай тине:

— Биш йыллыҡ пландың үтәлеше тураһындағы белдереү беҙгә ҙур шатлыҡ килтерҙе. Беҙҙең промысла коллективы биш йыллыҡ пландың үтәлеүенә үҙенең көсөн йәлләмәй эшләне. Пландан тыш меңәрләгән тонна нефть сығарҙы. Был уңышҡа яуап итеп, беҙҙең участка йыллыҡ планды 21 декабргә үтәргә йөкләмә алды. Уны ла беҙ намыҫ менән үтәйәсәкбеҙ.

Трибунала оператор иптәш Тимербулатов:

— Биш йыллыҡ пландың срогынан алда үтәлеүе илебеҙҙең тыныслыҡ яҡлы тороуын тағы ла бер тапҡыр бөтәбеҙгә лә асыҡ күрһәтте. Беҙҙең бригада, Май алды социалистик ярышына ҡушылып, стахановсы вахтаға баҫты: Тәүлек нормаһы арттырып үтәлә.

Шундай уҡ митингылар ҡаланың башҡа предприятиеларында ла булып үттеләр.

АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА

В. И. Лениндең „Аҙык-түлек налогы тураһында“ тигән хеҙмәте

Бынан утыҙ йыл элек, 1921 йылдың 21 апрелендә В. И. Ленин үҙенең «Аҙык-түлек налогы тураһында» тигән гениаль хеҙмәтен тамамланы һәм ул айырым брошюра булып йөҙ мең тираж менән баҫып сығарылды. Был әҫәрендә В. И. Ленин яңы экономик политиканың әһәмиәтен һәм уны тормошка ашырыу шарттарын бик ябай рәүештә һәм айырата асыҡлыҡ менән нигеҙләне. 1921 йылда партия һәм совет работниктәре араһында В. И. Лениндең «Аҙык-түлек налогы» исемле брошюраһынан да популярыраҡ китап булманы, урындағы партия, совет органдары ул брошюраны күп тапкырҙар ҡайтанан баҫып сығарҙылар.

В. И. Лениндең тәҡдиме буйынса 1921 йылдың мартында партиябыҙҙың X съезы яңы экономик политика индереү тураһында ҡарар ҡабул итте.

Билдәле булыуынса, был осор йәш Совет республикаһы өсөн иң ауыр йылдар осоро ине. Пролетариат диктатураһы граждандар һуғышын еңеүле тамамлап, сит ил интервенттәрен һәм аҡ гвардиясыларҙы тар-мар итеп, тыныс төҙөлөш эшенә күсеү алдында тора ине.

Партия алдында бик ҙур ауыр бурыс—илебеҙгә империалистик һәм граждандар һуғышы тарафынан яһалған ҡаты яраны уңалтыу бурысы тора ине. Сөнки империалистик һуғыш, сит ил интервенттәре һәм аҡ гвардиясылар тарафынан илебеҙҙең халыҡ хужалығына яһалған зарар бик ҙур булды. Бик күп завод һәм фабрикалар емертелгәйне, тимер юлдар ҡаҡшағайны, күперҙәр емерелгәндәр, баҫыуҙар сәселмәй буш яталар ине.

Государство промышленносеның продукция етештереүе һуғышҡа тиклемге кимәлдең 18 процентен генә тәшкил итә ине. Сәсеү майҙаны һуғышҡа тиклемге майҙандың биштән бер өлөшөн генә, ә бөтә ауыл хужалығы продукцияһы 1920 йылда һуғышҡа тиклемгенең яртыһын ғына тәшкил итә ине. Транспорт өсөн, фабрика, заводтар өсөн яғыулыҡ етешмәй ине. Илдә иң кәрәк нәмәләргә мохтажлыҡ ҙур ине.

Мәскәү, Ленинград, Харьков, Донбасс кеүек илдең иң индустриаль үҙәктәре аслыҡтан яфаландылар. Иптәш Сталин, колхозсы-ударниктәрҙең беренсе Бөтә Союз съезында Мәскәү, Ленинград, Харьков һәм Донбасс эшселәренең ул саҡта кисергән мохтажлыҡтарын колхозсыларҙың хәтеренә төшөрөп, былай тине: «Мин һеҙгә эшселәрҙең 1918 йылдағы тормошонан ҡайһы бер фактарҙы һөйләй алыр инем, ул саҡта эшселәргә төтөш аҙналар буйына бер һынык икмәк тә бирелмәй торғайны, ит һәм башҡа аҙыҡ продукттары тураһында һөйләп тораһы ла юҡ инде. Ул саҡта, Ленинград һәм Мәскәү эшселәренә бер ярым асмуха ҡара икмәк бирелгән көндәр иң яҡшы ваҡыт булып иҫәпләнә ине, әле ул икмәк тә яртылаш жмых ҡушып бешерелгән була ине. Һәм был хәл бер ай һәм ярты йыл ғына түгел, ә тотош ике йыл дауам итте» (Сталин. «Ленинизм мәсьәләләре» Башгосиздат. 440-сы бит).

В. И. Ленин 1918 йылдың яҙында уҡ, «Совет хөкүмәтенең сираттағы бурыстары» тигән әҫәрендә һәм башҡа хеҙмәттәрендә социалистик төҙөлөшкә күсеү планын эшләгәйне. Ләкин ул саралар, беҙгә көсләп таҡҡан граждандар һуғышы һәм Англия-Америка империалистәре интервенцияһы арҡаһында өҙөлдөләр. Һуғыш һис кисекмәҫтән аҙыҡ-түлек развёрсткаһына күсергә мәжбүр итте. Был «хәрби коммунизм» осороноң башланыуы ине.

«Хәрби коммунизм» Совет власының сараһыҙҙан ҡулланған политикаһы булды, ул һуғыш һәм емереклек һөҙөмтәһендә килеп тыуҙы. «Массовый ҡулланыу тауарҙарын туплау һәм улар менән армияны һәм ауылды тәьмин итеү өсөн Совет власы эре промышленностан башҡа, урта һәм ваҡ промышленносте лә үҙ контроле аҫтына ҡуйҙы. Ул игеҙ сауҙаһына монополия индерҙе, иген менән хосуси сауҙа итеүҙе тыйҙы һәм крәҫтиәндәрҙән бөтә артыҡ аҙыҡты иҫәпкә алыу, иген запасы туплау һәм армияны, эшселәрҙе аҙыҡ менән тәьмин итеү өсөн аҙыҡ-түлек развёрсткаһы индерҙе («ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы» 219-сы бит).

Хәрби коммунизм политикаһы мотлаҡ кәрәкле булып торҙо, башҡа юл юҡ ине. Аҙыҡ-түлек развёрсткаһынан башҡа, хәрби коммунизм политикаһынан башҡа граждандар һуғышынан еңеп сығыу мөмкин булмаҫ ине. Артыҡ аҙыҡ-түлекте крәҫтиәндәрҙән, хатта ниндәй ҙә булһа икенсе средстволар менән хаҡын да түләмәйенсә, алыуҙан башҡа юл юҡ ине. Был илде ҡотҡарыу, армияны һәм эшсе-крәҫтиән власын ҡотҡарыу өсөн кәрәк булды.

Крәҫтиәндәр Совет власы ҡулынан ер алдылар, Ҡыҙыл Армия уларҙы помещиктәрҙең кире ҡайтыуынан һаҡланы. Шуға күрә крәҫтиәндәр аҙыҡ-түлек развёрсткаһына барҙылар, һәр төрлө мохтажлыҡҡа һәм етешмәүлеккә түҙҙеләр. Граждандар һуғышы утлы осоронда эшселәр синыфы менән крәҫтиәндәрҙең хәрби-политик союзы төҙөлдө һәм нығыны. Ләкин һуғыш бөтөп, туп гөрһөлдәүе тынғас, иң һуңғы батша генералы Врангель тар-мар ителеп, бөтә армияһы менән Ҡара диңгеҙгә алып ташланғас, һуғыш һәм аслыҡ менән ыҙаланған кешеләр фронттан өйҙәренә ҡайтып, хәҙер һис кисекмәҫтән яҡшыртыуҙы талап итә башланылар. Хәрби коммунизмдең бөтә системаһы крәҫтиән интереҫтәренә ҡаршы килә башланы.

Ризаһыҙлыҡ эшселәр синыфына ла ҡағылды. Эшселәр синыфы граждандар һуғышында бөтә ауырлыҡты үҙ елкәһендә алып барҙы. Завод һәм фабрикаларҙың ябылыуы һәм өҙөклөк менән эшләүе арҡаһында эшселәрҙең бер өлөшө ауылдарға ҡайтып, унда кустарсылыҡ менән шөғөлләнделәр, улар инде, асылда, эшсе булыуҙан туҡталғайны һәм деклассироваться ителгәндәр ине.

Пролетариат диктатураһының синфи базаһы йомшара башланы. Аслыҡ һәм мохтажлыҡ һөҙөмтәһендә эшселәр синыфының да бер өлөшө ризаһыҙлыҡ күрһәтә башланы. Илдә хужалыҡ һәм политик кризис үҫә башланы. Совет иленең дошмандары был хәлдән файҙаланып ҡалырға ынтылдылар һәм аллауҙар, провокацион юлдар менән халыҡтың аңһыҙ өлөшөн Совет власына ҡаршы ҡоторттолар.

Эшселәр менән крәҫтиәндәр союзының яңы хужалыҡ нигеҙен төҙөү кәрәклеге килеп тыуҙы. Хәҙер инде «Союздың икенсе формаһы кәрәк. Хәҙер инде эш ерҙе крәҫтиәнгә һаҡлап ҡалдырыу тураһында бармай, ә крәҫтиәнгә был ерҙән алынған продукт менән ирекле эш күреү хоҡуҡын тәьмин итеү тураһында бара» тип яҙҙы иптәш Сталин 1921 йылда. (И. Сталин. Әҫәрҙәр 5 том. 123-сө бит).

Эшселәр синыфын нығытырға кәрәк булды, ваҡытлыса сигенеп, тылға яҡынлашырға, крәҫтиәндәрҙең киң массаһы менән тоташырға, резервтарҙы тупларға, пролетариат диктатураһын көсәйтергә, һәм кәс йыйып капитализмға яңынан һөжүм башлар өсөн уны хәрби штурмлауҙан оҙаҡ ваҡытлы осадалауға күсергә кәрәк булды.

Шуның өсөн айкаллы партия илдең хужалыҡ тормошонон бөтә мәсьәләләре буйынса яңы установка эшләүгә керешге. Был яңы установка хәрби коммунизмдан яңы экономик политикаға (НЭП) ҡырҡа боролош яһау ине.

Яңы экономик политиканың кәрәклеген нигеҙләгәндә Ленин ваҡ крәҫтиән хужалығы менән бергә йәшәүҙең формаһын табыу иң мөһим эш, сөнки ваҡ крәҫтиән хужалығы, уларға баҙар һәм ирекле сауҙа тәьмин итмәйенсә йәшәй алмай, тип күрһәтте. Ваҡ крәҫтиән хужалығы, тип күрһәтте Ленин, ул ваҡ хужалыҡ булып ҡалған саҡта, уның экономик базаһына, йәғни ваҡ хужалығына ярашлы булған стимул, әтергес алырға тейеш.

Шуға күрә Ленин аҙыҡ-түлек развёрсткаһын һис кисекмәҫтән аҙыҡ-түлек налогы менән алмаштырыу кәрәклеген ҡуйҙы. 1921 йылдың февралендә крәҫтиәндәр мәсьәләһе тураһында Ленин үҙенең тәүге наброскаларында: развёрстканы иген налогы менән алмаштырыу, был налогтың күләмен үткән йылғы развёрсткаға ҡарағанда кәм итеү, крәҫтиәнгә налогтан артып ҡалған игенде урындағы хужалыҡ әйләнешендә файҙаланыу иркен киңәйтеү мәсьәләләрен күҙҙә тотто. Был тезистәр партия Үҙәк Комитетенең развёрстканы натураль налог менән алмаштырыу тураһындағы ҡарары проектының нигеҙенә һалындылар.

Партияның X съезы В. И. Лениндең тәҡдиме буйынса «развёрстканы натураль налог менән алмаштырыу тураһында» ҡарар ҡабул итте.

1921 йылдың 21 апрелендә продналог тураһында декрет иғлан ителде. Был декрет буйынса 1921—1922 хужалыҡ йылдарына аҙыҡ-түлек налогы, 1920—1921 йылғы аҙыҡ-түлек развёрсткаһына ҡарағанда, ике тапҡырға тиерлек кәм, йәғни 423 миллион бот урынына 240 миллион бот билдәләнгәйне. Был декретҡа өҫтәп 1921 йылдың апрелендә потребитель кооперацияларҙы тураһында декрет иғлан ителде. Был декрет бынға тиклем йәшәп килгән бөтә сикләүҙәрҙе юҡҡа сығарҙы һәм ауыл хужалығы продукттарын әҙерләүҙе рөхсәт итте, кооперацияларҙы ҡала менән ауыл араһында нормаль сауҙа итеүҙе юлға һалыуға мәжбүр итте. Шулай итеп, аҙыҡ-түлек налогын индереү менән тауар әйләнеше иркенә, ирекле сауҙаға нигеҙ башланғыс һалынды.

Тауар әйләнешендә билдәле ирек күйыу капитализмдең йәнләнеүен тыуҙырмай ҡалмаңы, әлбиттә. Быны партия һәм уның юлбашсыһы В. И. Ленин алдан күргәйне. Ләкин Совет власы һаҡлаған саҡта, пролетариат диктатураһын нығытҡан һәм команда юғарылыҡтары — ер, промышленность, тимер һәм һыу юлдары, банкылар — уның ҡулында булған саҡта, тауар әйләнеше государствоның үҙе тарафынан урегулировать ителеүенә бөтә мөмкинлектәр бар ине. Шуның менән бергә, Совет власы билдәле күләмдә тауар алып, уның менән ирекле эш күреп, пролетариат власын политик яҡтан ғына түгел, бәлки экономик яҡтан да нығытты.

НЭП капиталистик элементтарҙың йәнләнеүенә юл ҡуйыу ине, әлбиттә, ләкин был юл ҡуйыу үҙе социалистик элементтарҙың капиталистик элементтарға ҡаршы көрәшенә иҫәп тота ине. Совет власы пролетариат диктатураһынып бөтә көсөн социалистик элементтарҙың капиталистик элементка ҡаршы көрәшенә булышлыҡ итеүгә йүнәлдерҙе. Яңы экономик политика бөтөнләйе менән социалистик экономиканың нигеҙен һалыуға, социализмдең еңеүенә йүнәлтелгәйне. Яңы экономик политика арҡаһында пролетариаттың крәҫтиәндәр менән мөнәсәбәте яҡшырҙы, улар араһындағы союз нығытылды, эшселәр синыфы көсәйҙе, был союзда эшселәр синыфының етәкселек роле нығыны.

Троцкийсылар партияның был тәрән аҡыллы политикаһына ҡоторонып ҡаршы сыҡтылар. Улар НЭП-ты тик сигенеү генә тип һананылар. Бындай раҫлау улар өсөн файҙалы ине, сөнки улар капитализмде ҡайтанан булдырыу юлын алып барҙылар.

Ленин партияның был дошмандарына ҡаршы көрәштә НЭП-тың ысын характерен арымай-талмай аңлатты. «НЭП индерелгәндән һуң бер йыл үткәс тә Ленин, партияның XI съезында **сигенеү тамам булды,** тип белдерҙе һәм: **«хосуси хужалыҡ капиталына һөжүм әҙерләү»** лозунгыһын алға ҡуйҙы». («ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы» 245-се бит).

Иптәш Сталин Ленинсе яңы экономик политиканы троцкийсы-бухаринсы дошмандарға ҡаршы көрәштә яҡлап алып ҡалды, уны социализм төҙөүгә файҙаланды. «Национализацияланған индустрияны көсәйтергә һәм үҫтерергә; бының өсөн индустрияны государство тарафынан регулярлаштырелә торған сауҙа аша крәҫтиән хужалығы менән бәйләргә; аҙыҡ развёрсткаһын аҙыҡ налогы менән алмаштырырға һәм һуңынан, аҙыҡ налогының күләмен аҡрынлап кәметә барып, эште индустрияла етештерелгән нәмәләрҙе крәҫтиән хужалығы продукттарына алмашыуға ҡайтарып ҡалдырырға; сауҙаны йәнләндерергә һәм, миллионлаған крәҫтиәндәрҙе кооперацияға ылыҡтырып, кооперацияны үҫтерергә, — социалистик экономика фундаментын төҙөү юлындағы хужалыҡ төҙөлөшөнөң сираттағы бурыстарын Ленин нәҡ шулай тасуирланы» тип өйрәтте иптәш Сталин («Ленинизм мәсьәләләре» 43-сө бит).

В. И. Лениндең яңы экономик политиканы нигеҙләүсе «Аҙык-түлек налогы тураһында» тигән хеҙмәте марксистик-ленинсе материалистик диалектикаға ҡоралған иң үткер ҡорал булып тора. Ул политик һиҙгер булырға, революцион көрәш тактикаһы һәм стратегияһының иң ҡатмарлы мәсьәләләрен хәл итә белергә өйрәтә; ул синфи дошмандарға ҡарата аяуһыҙ булырға, халыҡ массаларының ижади көсенә ышанырға, социализмдең еңәсәгенә тәрән ышанырға өйрәтә.

Яңы экономик политиканың халыҡ-ара әһәмиәте бик ҙур. Капитализмдан социализмға күсеү осорондағы был ленинсе тәрән аҡыллы политика тик Россиялағы социалистик революцияның үҙенсәлеге генә булып тормай. Яңы экономик политика — бөтәһе өсөн дә большевистик политиканың, большевистик тактиканың өлгөһө ул. Хәҙерге көндәрҙә халыҡ демократияһы илдәре уны ҡулланалар. Ул пролетар революцияһы булаcаҡ, ул эшселәр синыфы диктатураһы тормошҡа ашырылаcаҡ бөтә илдәр өсөн дә ҡулланма була ала. Сөнки һәр илдә лә аҙмы-күпме ваҡ тауар хужалыҡтары (ваҡ крәҫтиәндәр хужалыҡтары, ремесленниктәр һ. б.) бар. Еңгән пролетариат уларҙың интереҫтәре менән иҫәпләшергә тейеш булаcаҡ.

В. И. Лениндең «Аҙык-түлек налогы тураһында» тигән гениаль әҫәре яҙылған ваҡыттан алып 30 йыл үтте. Был ваҡыт эсендә беҙҙең Тыуған илебеҙ экономик яҡтан да, политик яҡтан да иң тиклем нык үҙгәрҙе, беҙҙең социалистик державабыҙ халыҡ-ара аренала ниндәй ҡеүәтле илгә әйләнде! НЭП Россияһы — социалистик Россия булып, бөйөк социализм иле булып әүерелде. Утыҙ йыл эсендә Тыуған илебеҙҙә социализмдең мәһабәт бинаһы һалынды һәм социализмдан аҡрынлап коммунизмға күсеү тормошҡа ашырыла.

Илебеҙҙең бынан утыҙ йыл элек айырым йәшәгән, ваҡ буржуаз стихияһын тәшкил иткән күп миллионлаған крәҫтиәндәре Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә яңы техника менән байыҡтырылған, иң алдынғы совет агробиология фәненә нигеҙләнгән эре колхоз хужалығына әйләнде. Тотош коллективлашеу нигеҙендә капитализмдең һуңғы иң күп һанлы вәкиле булған кулактар синыф булыу яғынан бөтөрөлдө. Илебеҙҙең эшселәре, крәҫтиәндәре һәм интеллигенцияһы берҙәм хеҙмәт фронтына тупландылар. Социализмдең еңеүе, эксплуататор синыфтарҙың бөтөрөлөүе һөҙөмтәһендә совет халҡының мораль-политик берҙәмлеге, халыҡтар араһында әленән-әле нығый барған дуҫлыҡ барлыҡҡа килде.

Совет халҡы тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу буйынса шундай грандиоз пландар тормошҡа ашыра, бындай эштәр тураһында бынан 30 йыл элек — ваҡ крәҫтиән, ярлыҡ хужалыҡ ваҡытында — ундай эштәр тураһында хыял итеү ҙә мөмкин түгел ине.

Совет халҡы хәҙер коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә керешге. Большевиктар партияһы етәкселегендә, бөйөк Сталин юлбашсылығында совет халҡы коммунизмдең яҡты бейеклегенә табан алға бара.

О. Әбдәлбәкиев,

М. Ғафури исемендәге тел, әҙәбиәт, тарих, ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотруднигы.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Ҡала комитетенең эшендәге етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бөтөрөргә

Черниковск ҡалаһы партия ойошмаһының V конференцияһы булып үтте. Конференцияла ВКП(б)-ның ҡала комитеты секретаре иптәш Пацурия ҡала комитетенең эше тураһында отчет доклады менән сығыш яһаны.

Иптәш Пацурия докладының ҙур өлөшөн ҡаланың хужалыҡ һәм политик тормошонда өлгәшелгән уңыштарҙы йомғаҡлауға арнаны. ВКП(б)-ның XXII Өлкә һәм IV ҡала конференцияларҙы ҡарарҙарын тормошҡа ашырып, партия ойошмаһы отчет осоронда ҡалалағы промышленность предприятиеларының коллективтарын алда торған политик һәм хужалыҡ бурыстарын үтәүгә мобилизовать иткән. Шуның һөҙөмтәһендә ҡала промышленносе үҙған йылда техник-экономик күрһәткестәрҙе байтаҡ яҡшыртты. Ҡала промышленносе үҙенең һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планын үҙған йылдың декабрь башына үтәне.

Отчет осоронда партия-ойоштороу һәм партия-политик эштәрҙең кимәлен күтәреү буйынса ла байтаҡ эштәр башҡарылған. Күпселек партия ойошмаларында коммунистарҙың дөйөм йыйылыштары регуляр уҙғарыла. Йыйылыштарҙа партия тормошононң актуаль мәсьәләләре тикшерелә. Комсомол һәм профсоюз ойошмаларына етәкселек байтаҡ яҡшырҙы. Партия һәм хужалыҡ активе йыйылыштары регуляр уҙғарыла башланы.

Ҡала партия ойошмаһы хеҙмәтсәндәрҙең культура-тормош шарттарын яҡшыртыуға ла ҙур иғтибар итә. 1950 йылда 58 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлөп, эксплуатацияға тапшырылды. 4 яңы мәктәп, өс урында балалар баҡсалары, яслелар, клубтар һәм больницалар төҙөлдө. Халыҡты медицина ярҙамы менән хеҙмәтләндереү яҡшыртылды.

Ләкин партия ойошмаһының эшендә сереәҙ етешһеҙлектәр ҙә күп. Ҡайһы бер предприятиеларҙың тәүге партия ойошмалары администрацияның эшмәкәрлеге өҫтөнән контролде насар ойоштороғандар. «Дубитель» һәм электр лампалары заводында, урындағы промышленность предприятиеларында артта ҡалыусылыҡ әлегә тиклем бөтөрөлмәгән. Электр лампалары заводы үҙған йылдың производство планын 92 процентка генә үтәне. Бында бракты бөтөрөү сараһы күрелмәй. Оборудованиелар тулы ҡеүәтендә файҙаланылмай.

Ҡайһы бер тәүге партия ойошмаларында партия йыйылыштарының ҡарарҙары үтәлеше өҫтөнән контроль булмағанлыҡтан уларҙың күбеһе тормошҡа ашырылмай. Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү тейешенсә йәйелдерелмәгән.

Урындағы Советтарға, РСФСР һәм БАССР Верховный Советтарына һайлауҙарҙан һуң күпселек партия ойошмалары халыҡ араһында агитмассовый эш алып барыуҙы бөтөнләй туҡтатҡандар.

Партия мәғарифе селтәре эшендә лә күп кенә етешһеҙлектәр бар. Ҡайһы бер түңәрәктәрҙә һәм политик мәктәптәрҙә занятиеларҙың идея кимәле түбән, күп кенә тыңлаусылар занятиеларға регуляр рәүештә йөрөмәйҙәр. Теоретик белемдәрен күтәреү өҫтөндә үҙ алдарына эшләйҙәр тип иҫәпләнеүсе 30-лап коммунист марксизм-ленинизм классиктарын өйрәнеү эшенә әле булһа тотонып та ҡарамағандар.

Отчет докладында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү аҙ булды. Иптәш Пацурия партия ойошмаһының эшендә булған етешһеҙлектәргә өҫтән-өҫтән генә ҡағылып үтте. Уларҙы большевистик принципиаллек менән асып һалманы. Шуға күрә фекер алышыуҙарҙа ҡатнашыусы делегаттарҙың сығыштарында ла тәнҡит етерлек булманы.

Ә бит «Правда» газетаһының 13 апрелдә сыҡҡан номерендәге мәҡәлә Черниковск ҡала партия ойошмаһы эшендәге етешһеҙлектәрҙе тәрән аса. Тик конференцияла докладсы ла һәм сығып һөйләүселәр ҙә бындай принципиаль мәсьәләләрҙе ҡуҙғатманылар. Электр лампалары заводының директоры Киселев, «Дубитель» заводы директоры Пелецкий, Черниковск төҙөлөш тресының партком секретаре Новиков иптәштәр кеүек артта һөйрәлеүсе предприятиеларҙың етәкселәре үҙҙәренең сығыштарында етешһеҙлектәрҙе төрлө урынһыҙ объектив сәбәптәр менән генә аңлаттылар. Нефть эшкәртеү заводы парткомының секретаре Лоскутов, ҡаланың һаулыҡ һаҡлау бүлеге мөдире Чудакова, 2-се номерлы ТЭС-тың начальнигы Рәжәпов иптәштәрҙең дә сығыштары, һәр ваҡыт партия активе йыйылыштарында һөйләнеп килелә торған айырым фактарҙы ҡабатлауға ғына ҡайтып ҡалды.

Конференцияла бөтәһе 26 делегат сығыш яһаны.

Химия заводының партбюро секретаре иптәш Грудников ВКП(б) ҡала комитетының работниктарын промышленность предприятиелары менән йәнле бәйләнеш тотмауҙары өсөн тәнҡитләне.

— Ҡала комитеты работниктәре,—тине ул, — предприятиеларҙа һирәк булалар. Улар предприятиеларға килһәләр ҙә бюро ултырышына йәки берәй йыйылышҡа әҙерләнеү өсөн мәғлүмәттәр алырға ғына килеләр. Ә ҡала комитетының икенсе секретаре иптәш Умов кабинетынан дә сыҡмай. Уның предприятиеларҙа бу... юҡ. Беҙҙең завод хәҙер бик ауыр ... кисерә. Эшләп сығарған продук... оҙатыу өсөн вагондар бирмәй ... дукцияны ҡуйыр урын булма... тап, беҙ ҡайһы бер цехтарҙы ... туҡтатырға мәжбүр булабыҙ. ... комитетының промышленность бүле... уның мөдире иптәш Вәлиев был ... лыҡтан сығыу өсөн беҙгә ярҙам ...

— Ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың ... өҫтөнән контроллек итеүҙә, — ... не делегат иптәш Ногa үҙенең ... ғышында, — ВКП(б)-ның ҡала ... митете партияның тәүге ойош... рына өлгө күрһәтеү урынына ... үҙенең сығарған ҡарарҙарының ... тикшермәй. Үҙған йыл ҡала комитет... нең бюро ултырышында культура-... учреждениеләре биналарын һалыу ... тураһында төҙөлөш ойошмаларының ... тыңланы. Бында «Ударник» клубы... нөйтеп төҙөүҙе октябрь айына тама... ға һәм Фурманов урамында төҙөлә ... мәктәпте яңы уҡыу йылына өлгө... ҡарар ҡабул ителгәйне. Ҡала ... үҙенең был ҡарарын онотто. Клуб ... лешендә лә һәм мәктәп төҙөлөшен... әлегә тиклем эштәр юлға йәйелдер... гән. Уларҙы срогына төҙөп бөтөрөү ... ҡыныс аҫтында тора.

Химия заводының мастеры иптәш С... үҙенең сығышында сауҙа ойошмалары... эшендә булған етешһеҙлектәр тураһ... һөйләне.

— Беҙҙең ҡалала, — тине иптәш С... зов, — халыҡ өсөн иң кәрәкле булған ... уарҙарҙы таба алмайһың. Ҡала хал... бирҙә, тас һәм ултырғыс кеүек нәмәл... алыу өсөн Өфөгә йөрөй. Сауҙа ойошма... рында булған етешһеҙлектәрҙе бөтөр... өсөн ВКП(б)-ның ҡала комитеты тейеш... сара күрмәй.

Конференцияның эшендә ВКП(б)-ның Өлкә Комитеты секретаре иптәш Т... байролов ҡатнашты. Ул үҙенең сығы... шында Черниковск ҡалаһы парти... ойошмаһы эшендә булған күп кенә ете... һеҙлектәрҙе асып тәнҡитләне һәм ком... мунистарҙы был етешһеҙлектәрҙе йылдам... бөтөрөргә саҡырҙы.

Конференция ҡала комитетының эше... артабан яҡшыртыуға йүнәлтелгән ҡарар ҡабул итте.

Ҡала комитетының конференция... һуң үткәрелгән пленумы Ш. Пацурия, П. Умов һәм П. Грушевский иптәштәрҙе ҡала комитетының секретарҙары итеп һайланы.

М. Мостафин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Промышленность предприятиеләре администрацияһының хужалыҡ эшмәкәрлегенә партия контролен көсәйтәйек

Стәрлетамаҡ коммунистарының VIII ҡала конференцияһы ВКП(б) ҡала комитетының эше тураһында горком секретаре иптәш **Миньяровтың** отчет докладын тыңланы.

— Отчет осоронда, — тине докладсы, — ҡаланың күп кенә партия ойошмаларында ойоштороу-партия һәм партия-политик эштәрҙең кимәле һиҙелерлек күтәрелде. Партия ойошмалары промышленность предприятиеларына етәкселекте көсәйттеләр. Һөҙөмтәлә ҡаланың күп кенә предприятиелары үҙҙәренең производство пландарын уңышлы үтәп килеләр. «Красный пролетарий» заводы, ағас заводы, тегеү фабрикаһы, Өфө тимер юлының 5-се бүлексәһе, горместпромкомбинат коллективтары һәм башҡалар 1950 йылдың планын срогынан алда үтәнеләр. Государствоға пландан тыш бик ҙур суммала файҙа бирелде. Ҡаланың промышленность предприятиелары 1950 йылда продукция эшләп сығарыуҙы, 1946 йыл менән сағыштырғанда, ике тапҡырға арттырҙылар.

Ләкин, дөйөм алғанда, ҡаланың күп кенә промышленность предприятиелары үткән йылда насар эшләнеләр. Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводы, төҙөлөш машиналары етештереү заводы, спирт заводы, аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһы кеүек күп кенә эре предприятиелар производство пландарын үтәп еткермәнеләр.

— Ағымдағы йылда, — тине докладсы һүҙен дауам итеп, — ҡала промышленносе үҙенең эшен бер аҙ яҡшыртты. 22 предприятие I квартал планын срогынан алда үтәне. Улар араһында Ленин исемендәге бынаса артта ҡалып килеүсе завод, күн заводы, аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһы һәм башҡа предприятиелар булыуы айырыуса шатлыҡлы. Предприятиеларҙағы бөтә эшселәрҙең 95 проценты ярышып эшләйҙәр. Коммунистар социалистик ярыштың алдынғы сафында баралар.

— Шулай ҙа, — тине иптәш Миньяров, — 1951 йылда ҡаланың күп кенә предприятиелары планды үтәү өсөн көрәштә ҡыҫҡан һынылыш яһамадылар әле. Дөйөм алғанда, ҡала промышленносе беренсе квартал планын үтәп еткермәне. Был хәл партия һәм хужалыҡ работниктарының 1950 йылдағы насар эшләүҙән үҙҙәренә тейешле һығымта яһамауҙары тураһында һөйләй.

Унан ары докладсы партия ойошмаларындағы партия-политик һәм ойоштороу эштәренең торошона туҡталды.

— ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһының, — тине докладсы, — «Стәрлетамаҡ партия ойошмаһында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе ҡыҫыу һәм семьясылыҡ күренештәренең фактары тураһындағы» ҡарары беҙҙә большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе киң йәйелдереүҙә ҙур роль уйнаны. Ләкин был ҡарар тулыһынса үтәлде, тип әйтеп булмай әле. Ҡайһы бер тәүге ойошмаларҙа партия йыйылыштары һирәк һәм түбән идея-политик кимәлдә үткәрелә. Көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәләләр өҫтән-өҫтән генә ҡарала һәм сығарылған ҡарарҙар тормошҡа ашырылмайынса, ятып ҡалалар. Паровоздар депоһы, ликер-араҡы заводы партия ойошмаларында партияның эске эштәре бик йомшаҡ ҡуйылған. Шуға күрә лә улар предприятиеларҙың эшенә тейешенсә йоғонто яһай алмайҙар.

Быйылғы уҡыу йылында партия мәғарифе селтәрендә 2.765 коммунист уҡый. Партияһыҙҙарҙан 1000-дән артыҡ кеше политик уҡыуға йәлеп ителгән.

Ләкин бында ла ҙур етешһеҙлектәр бар. Занятиеларға йөрөү тик 70—75 процент кенә тәшкил итә. Ҡала комитеты пропагандистарҙың квалификацияһын күтәреү эшен насар ойошторған. Ҡала хеҙмәтсәндәре араһында лекция пропагандаһы яҡшыртыу өсөн бөтә мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан, был эш беҙҙә бик насар тора әле.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа бөтәһе 30 кеше ҡатнашты. Улар үҙҙәренең сығыштарында ҡала партия ойошмаһының өлгәшелгән уңыштарын билдәләү менән бергә, уның эшендә урын алған етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләнеләр.

«Красный пролетарий» заводының кадрҙар бүлеге начальнигы иптәш **Минаев** ҡала комитетының промышленность предприятиелары партия ойошмалары менән насар бәйләнештә булыуын әйтте.

— Ҡала комитеты, — тине ул, — күп ваҡыт предприятиеларҙағы ысынбарлыҡты белмәй. Докладта беҙҙең заводтың эше маҡталды. Ысынында беҙҙә, эш улай уҡ яҡшы тормай. Файҙаланылмаған эске резервтар күп, новаторҙарҙың алдынғы эш методтары ҡулланылмай. Партияның ҡала комитеты завод етәкселәренән әлегә был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙе талап итмәй. Шунлыҡтан беҙҙең етәкселәр план үтәлә бит, тип тыныс ҡына йәшәй бирәләр.

— Ҡала промышленносе, — тине делегат иптәш **Чистилин,** — көндән-көн үҫә. Ҡалала элек тик бер күн заводы ғына булһа, хәҙер уңарлаған ҙур заводтар һәм башҡа предприятиелар һалына. Был предприятиелар менән юғары квалификациялы етәкселек итеү талап ителә. Ләкин ҡала комитеты был бурысты тулыһынса үтәүҙән алыҫ тора әле. Етәкселек итеү үҫеш темпынан артта ҡала. Партия ойошмалары администрацияның хужалыҡ эшмәкәрлегенә контроллек итеү хоҡуҡынан тулыһынса файҙаланмайҙар. Предприятиеларҙың эшенә серьез анализ яһалмай. Һөҙөмтәлә хужалыҡ етәкселәре үҙҙәренә тапшырылған эште яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр. Шуға күрә лә ҡала промышленносе үткән йылда ла, быйылғы йылдың I кварталында ла государство планын үтәмәне.

Делегаттарҙан **Ольгинский, Хрипунов, Ғүмәров** һәм башҡа иптәштәр ҡала хеҙмәтсәндәрен идеологик яҡтан тәрбиәләү эшендәге етешһеҙлектәр тураһында һөйләнеләр. Улар партия ойошмалары тарафынан уҙғарылған политик-массовый эш предприятиелар алдында торған хужалыҡ бурыстарын үтәү менән бәйләп алып барылмауын билдәләнеләр.

Конференция делегаты иптәш **Маcин** ВКП(б) ҡала комитетының үҙе сығарған ҡарарҙарҙың үтәлешен һуң тикшереүен тәнҡитләне.

Стәрлетамаҡ ҡалаһы промышленносе үҫә барған һайын ҡалала йәшәүсе хеҙмәтсәндәрҙең һаны ла арта. Был унар меңләгән хеҙмәтсәндәрҙең көнкүреш шарттарын яҡшыртыу, культуралы ял итеүҙәрен ойоштороу ҡаланың партия һәм совет органдарының төп бурысы булып тора. Шуға күрә конференцияла сығыш яһаусы бик күп делегаттар ҡаланы төҙөкләндереү эшенә ҙур иғтибар иттеләр.

Конференцияла ҡатнашыусы БАССР Министрҙар Советы председателе иптәш **Уразбаев** делегаттар алдында ҙур телмәр менән сығыш яһаны.

Өлгәшелгән уңыштар менән бергә, тип күрһәтте, үҙенең сығышында иптәш Уразбаев, ҡала комитетының эшендә серьез етешһеҙлектәр ҙә бар. Ҡала промышленносеның үҫеш темпы дөйөм республика үҫеш темпынан күп түбән тора. Был факт ҡала партия ойошмаларының етәкселәре хәҙерге осорҙоң үҫеш темпы тыуҙырған яңы талаптарға иғтибар бирмәгәнлеген күрһәтә. Иптәш Уразбаев промышленность предприятиеларының эшен, хеҙмәтсәндәрҙең көнкүреш шарттарын яҡшыртыу һәм уларҙы коммунистик рухта тәрбиәләү буйынса Стәрлетамаҡ ҡалаһы большевиктары алдына практик бурыстар ҡуйҙы.

Конференция партия ҡала комитетының эшен артабан яҡшыртыуға йүнәлдерелгән ҡарар ҡабул итте.

Конференциянан һуң үткәрелгән беренсе пленум **Миньяров, Туголуков** һәм **Ғүмәров** иптәштәрҙе ВКП(б) ҡала комитетының секретарҙары итеп һайланы.

Б. Мырҙағәлиев.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

СТАЛИН ПРЕМИЯЛАРЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Бөйөк дуҫлыҡ тураһындағы әҫәр

...илебеҙҙә был хәҙер традиция: ...һайын фән, уйлап табыуҙар, әҙә... ...м искусство өлкәһендә күренекле ...өн Сталин премиялары бирелә. ...ый ҙур баһаны алыуға лайыҡлы бу... ...м ысын-ысынлап күренекле эш ...ларға кәрәк. Большевиктәр партия... ...етәкселегендә йәшәгән, көрәшкән, ...бетмәҫ-төкәнмәҫ хәстәрлеге менән ...алынған совет кешеләре быға өл... ...лар ҙа. Сталинсә хәстәрлек үҙенең ...кештәрен бирә.

...тәге түгел 1950 йыл өсөн Сталин ...лары биреү тураһында ҡарар бул... Ул ҡарарҙа туғандаш татар халкы... күренекле яҙыусылары Ҡауи Нәжми ...Ғүмәр Бәшировҡа иптәштәргә уларҙың ...ы елдәр» һәм «Намыҫ» романдары ...Сталин премиялары биреү тураһын... ...әйтелгән.

...ғанаш халҡ яҙыусыларының ғына ..., э бөтә татар совет әҙәбиәтенең ...баҙнышын көүәҙәләндереүсе ошо хә... ...республикабыҙҙың китап уҡыусыла... ...ҙур шатлыҡ килтерҙе.

...ҙәй азат итеү өсөн йылдар буйына ...барылған ауыр көрәштәр утында ...сынығыу алған беҙҙең илебеҙ ...тарының ҡаҡшамаҫ дуҫлығы тура... ...һөйләүсе «Яҙғы елдәр» романы ...ҡыҙыҡһыныу менән уҡыла.

...—яҙыусы тарафынан оҙаҡ йылдар ...ына алып барылған ҙур әҙерлектең ...ижәһе булып тора. Ошондай яуаплы ...ны башҡарыу, хеҙмәтсән татар хал... ...ың кешелек яҙы тантанаһы өсөн дө... ...Рәсәй пролетариатының героик кө... ..., бызаттар буйына йәшәп килгән ...утатарҙар власен ҡолатыу өсөн ...итеүс көрәштә ҡатнашыуын, уны ...көрәшкә килеү юлын тарихи дөрөҫ ...ҡ художестволы итеп биреү ...тормошто тәрән белергә кәрәк ине. ...тамыр бик бай әҫәрҙә — уҙған ...быуаттың һуңғы йылдарын һәм да... ...Октябрь көнөнә тиклем булған ...ҙә җенә ала.

Уҡыусы романда революцион көрәшкә ...татар хеҙмәтсән халҡының юлын ...Мостафа Сәүбәновтар семьяһы өлгөһендә ...образдарында күрә. Сәүбәновтар хеҙ... ...һөйтә һәм эксплуататорҙар иҙеүен... ...килгән кешеләр. Мостафаның ҡарт ...феодаль Рәсәй өҫтөндә йәшен ...уткән Емельян Пугачев вос... ...тәнә ҡатнашҡан. Азатлыҡ һөйөүсе ...да ул ваҡытта, билдәле булған сәбәп... ...арҡаһында, еңелеүгә осраған. Ләкин ...көрәш туҡтаған тигән һүҙ түгел. Мос... ...фа Сәүбәнов, уның улы Гәрәй эксплуа... ...торҙарға ҡаршы көрәштә бөтөнләй яңы ...ға баҫалар.

Мостафа Сәүбәнов—элекке грамотаһыҙ ...ктиан. Ярлы халҡ өҫтөнә үҙенең ҡот ...ос йәшәтле күренештәре менән ябы... ...лып килгән ӘСЛЫҠ йылында Мостафа ...тыуған ауылы Тигәнәлене — «Шүрәле ...гән ауыл», «Ябалаҡ улгән ауыл» ...ы ын сыҡҡан, ҡырҡ тартмасылар ҙа ...уҙа торған ауылын ташлап, ...ҡаға китә.

— Ил күргәнде күрербеҙ... тине... Мостафа — һаҡыт-һаба менән струмент... ...бишек арбаға тейәп, үҙем тартыр... ...ы...»

...ы кесәй балаларын, юл тоҡсайҙа... ...ҙур арбаларына, тәгәрмәсле бишек... тәргә тейәп, астар ауыл менән һау бул... лашып, олө юлға боролдолар. Мостафа ошолар араһында ине.

Ауыл халҡы араһында былай тиҙәр: «Ҡалала йәнәһе, бөтә Тигәнәле халҡы һыйырлыҡ йорттар бар. Тәҙрәләре сат...

Сталин премияһы лауреаты Ҡауи Нәжми.

...көҙгә, ти. Ҡибеттәрендә түңәрәк һаҡал... лы, хатфә түбәтәйле купецтар, келәм өҫ... тәнә аяҡ бөкләп, иртәнән кискә тиклем акса һалайҙар, имеш. Һанап ҡына иҫә... бенә сығырлыҡ түгел икән, ти ул бай... лыҡтың».

Ләкин ул байлыҡ ярлылар өсөн түгел. Ҙур ҡала йылы сырай менән ҡаршыла... май уларҙы: Шул уҡ ғәҙелһеҙлек, хеҙмәт... сән халҡ өсөн шул уҡ бәхетһеҙ тормош.

Ауыр тормоштан сығыу юлын кешеләр бергәләп эҙләйҙәр. Кисәге грамотаһыҙ крәҫтиән Мостафаға быҡла, ҡалала про... летариаттың алдынғы вәкилдәре ошо ауыр тормоштоң сәбәбен аңлаталар. Ул хеҙмәтсән халҡтың төп дошмандары кем... дәр икәненә төшәнә. Иҙелгән бөтә халҡ менән бергә көрәшкәндә генә дошманды еңеп буласаҡ. Көрәш барышында быға тиклем Рәсәйҙә иҙелеп килгән бөтә мил... ләттәрҙең эшселәре бөйөк большевиктәр партияһы байрағы аҫтына баҫалар. Мос... тафа Сәүбәнов та ошо сафта һәм ул аҙа... ғына тиклем ошо ҡорос сафта ҡала ла һәм уның менән бергә уның улы Гәрәй ҙур һынауҙар үтә. Мостафа һәм Гәрәй — атә һәм ул—революционерҙар, большевик... тәр. Көрәш барышында ауыр һынауҙар, мәхрүмлектәр уларҙың ихтыярын һындыра алмайҙар, улар рус пролетариаты ярҙа... мында донъяны аңларға өйрәнгән һәм уны үҙгәртеп ҡороу юлында баҫҡан ныҡ... лы большевиктәр булып етешәләр.

Пролетариат интернационализмен һөй... ләй был роман! Татар пролетариаты революцион көрәш майҙанында башҡа милләт пролетариаты менән бергә, бер шеренгала барып, үҙенең һәм, тимәк, бөтә милләт пролетариатының яуыз дошманы булған буржуаз милләтселәргә, уларҙың һәр төрлө эҙәнеүҙәренә ҡаршы аяуһыҙ көрәшә. Ҡаҙан социал-демократтары ко... митетенең Мәскәү, Петроград, Баку про... летариаты менән, унда йәшәүсе больше... виктәр менән бәйләнеше оҫта күрһәтел... гән татар революционеры Хәсән Айвазов... ...ла ошондай хат килә: «...Бөтә Баку эш... селәре һуғыштың һәм самодержавиеның бөтөрөлөүен талап итеп (һүҙ рус-япон һуғышы тураһында бара. Автор), эш таш... ларға өҙөрләнәләр. Ҡаҙан эшселәре был ҡуҙғалыштан, әлбиттә, ситтә ҡалмаҫтар. Һинең бурыс — татар эшселәрен тәрбиә... ләү».

Кавказда бер нисә йыл йәшәп ҡайт... ҡан Алексей Халявин Мостафаға ошон... дай һүҙҙәрҙе һөйләй: Батумға... «барып эшкә урынлаштым. Бер ваҡыт иштем, эшселәр ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа шыбырлашып һөйләшәләр: «Хәҙер эш хоҡҡа китәсәк. Хәҙер беҙҙең етәксебеҙ бар». 1901 йыл... дың һуңғы көнө ине. Яңы йыл ҡаршы... лау һылтауы менән бер иптәштең фатир... ренә йыйылдыҡ. Барып инеүгә күңелә шаулап килгән тауыштар ишеттем. Күрәм: түрҙә, миңә таныш эшселәр урта... һында, ҡара сәсле, ябыңҡыраҡ кәүҙәле, йөҙөндә дарт һәм көс балҡып торыусы егет нимәләр һөйләй. Мин шунда уҡ уның эшселәр әйткән кеше икәнлеген аңлашым. Ул беҙҙең хәлдәребеҙҙе һораша, беҙҙең ауылдарға өҫтән, башҡа ҡалалар... ҙағы эшселәрҙең тормоштары, көн-күреш... тәре, көрәштәре тураһында һөйләй һәм беҙҙе лә ойошорға саҡыра. Һөйләшеп ул... тыра торғас, уның күҙҙәре тәҙрәгә төш... тө. Ғүмеремдә онотаһым юҡ, — шул тәҙрәнән бөтә Рәсәйҙе, беҙҙең бөтәбеҙ... ҙең дә киләсәген күргән төҫлө өндәште ул: — «Яҡтыра инде, тиҙҙән ҡояш сы... ғыр. Таралырға ваҡыт. Йылдар уҙырҙар, һәм был ҡояш беҙҙең өсөн, беҙҙең бала... ларыбыҙ өсөн яҡтырыр». Шунан һуң әллә ни күп ваҡыт та үтмәне. Батум эш... селәре Ҡыҙыл Байраҡ күтәреп, нефть короллеренә ҡаршы көрәшкә сыҡтылар. Иң алдан ул бара. Яҙғы ел уның шар... фын елберҙәтә һәм ул үҙе лә, яҡынла... шып килеүсе тормош яҙының хәбәрсеһе кеүек, ҡояш нурҙары эсенән осоп бар... ғандай күренә ине...»

Был иптәш Коба — Сталин ине.

Алексей Халявиндең был һүҙҙәре Мос... тафаны ҡанатландырып ебәрҙеләр. Хәҙер инде ул быға тиклем томанлы һәм шомло ҡараңғылыҡта уҙған тормошонда ла яҡ... ты мәғәнә барлығын һиҙә. Иртәнге сә... ғәттәрҙә эшкә барышлай алыҫ офоҡтарға һоҡланып ҡарай. Һәм уға, шул тауҙар артынан халҡтың иң саф выжданлы улы күтәргән ал байраҡ, ҡояш менән бергә ҡушылып балҡыр төҫлө тойола ине.

Лениндең «Искра» һәм Лениндең яҡынлы телмәрҙәре, мәҡәләләре халҡ аңы... на тәрән үтеп инә һәм Ленин, Сталин етәкселегендә татар хеҙмәтсән халҡы са... модержавиене штурмлауҙа актив ҡатна... ша, еңеү таъмин ителә. Рәсәйҙә хеҙмәт... сән халҡтың азатлығын хәбәр итеп ал байраҡ елберҙәй.

Әҫәрҙең йөкмәткеһе тәрән булыу менән бергә, теле лә бай. Яҙыусы халҡ мә... ҡалдәрен, йырҙарын күп һәм оҫта ҡул... ланған. Ошонон һөҙөмтәһендә ваҡиғалар уҡыусыға аңлау еңел булған формалар... ларҙа сиселәләр. Образлар бер-береһенән кеҫлө айырылып торалар, уларҙың һәр ҡайһыһының үҙенселектәре бар һәм уҡыусы бөтә роман буйына уларҙың үҫтерелә барыуын күрә.

«Яҙғы елдәр» — уңышлы роман һәм уның ошондай уҡ дауамы булыр тип ышанырға кәрәк.

З. Ишмаев.

Әҙәбиәт, искусство работниктәренең йыйылышы

16 апрелдә Өфөлә әҙәбиәт һәм искус... ство работниктәренең йыйылышы булды. Йыйылышта артистәр, яҙыусылар, компо... зиторҙар һәм общественный ойошмалар... ҙың вәкилдәре ҡатнаштылар. ВКП(б) Өлкә Комитетенең пропаганда буйынса секретаре иптәш С. Сәетбатталов «Театр учреждениеларенең һәм художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәренең репертуары һәм уны яҡшыртыу бурыстары» тигән темаға доклад яһаны.

— ВКП(б) Үҙәк Комитете идеология мәсьәләләре буйынса булған тарихи ҡа... рарҙарында, — тине иптәш Сәетбатта... лов, — әҙәбиәткә, драматургияны, музы... каны, ғөмүмән, искусствоның бөтә төрҙә... рен үҫтереүҙең боевой программаһын бир... ҙе. Совет әҙәбиәтен һәм искусствоһын ар... табан үҫтереү һәм спектаклдәрҙең идея... художество кимәлен күтәреү һәр ваҡытта коммунистар партияһының һәм Совет хө... күмәтенең иғтибар үҙәгендә торҙо һәм то... ра. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең әҙәбиәт һәм репертуар тураһындағы ҡарарҙарынан һуң, беҙҙең республикала яңы репертуар... ҙың нигеҙе тыуҙырылды. Совет тематика... һына байтаҡ пьеса яҙылды. Колхозсылар тормошон һәм хеҙмәтен күрһәтеү генә тү... гел, эшселәрҙең тормошона һәм фиҙакәр хеҙмәтенә арналған пьесалар ҙа барлыҡ... ҡа килде. Мәҫәлән, «Тәрән һулыш», «Са... ғидә», «Ҡала иртәһе». Башҡорт государ... ство академия драма театры быйылғы ҡышҡы сезонда бер нисә оригиналь пьеса күрһәтеүгә өлгәште.

Иптәш Сәетбатталов башҡорт совет драматургтары тарафынан яҙылған пьеса... ларға анализ бирә лә, әҙәбиәт һәм ис... кусство өлкәһендәге етешһеҙлектәргә ку... ҫә. Ул үҙенең докладында яҙыусылар та... рафынан сәхнәгә тәҡдим ителгән байтаҡ пьесаның сифатһыҙ, тормошһоҙ, ялған конфликтҡа ҡоролған, нигеҙһеҙ булып сыҡҡанлығын, айырым яҙыусыларҙың ҡабалан эшләүен, тормошто өйрәнмәүен, идея-политик кимәлен күтәреү өҫтөндә эшләмәүен тәнҡитләне. Беҙҙәләр театры репертуарының юҡлығы, бер шаршаулыҡ пьесаларҙың бик аҙ булыуы һәм был өл... каларҙа бер кемдең дә ысынлап эшләмә... үе театр учреждениеларен һәм яҙыусы... лар Союзын тынысһыҙландырырға тейеш.

Яҙыусылар һәм композиторҙар үҙ ижадтарында халҡ менән тығыҙ бәйлә... нештә булырға, халҡ фольклорын файҙа... ланырға бурыслылар. Ләкин беҙҙең ком... позиторҙарҙың ижадында халҡсанлыҡ аҙ, күп йырҙар аңлашылмай, түбән художе... стволы булалар. Шағирҙар һәм компози... торҙар әҫәр ижад итеүгә бик аҙ хеҙмәт һалалар. Композиторҙар ҙур полотнолы эшкә ҡыйыуһыҙ тотоналар. Рус компо... зиторҙары ярҙамында яҙылған «Сыңрау торғи» һәм «Аҡбуҙат» ыңғай әҫәр бу... лып иҫәпләнәләр. Ләкин уларҙан һуң үҙ йыл буйына бер генә опера һәм балет та яҙылманы. «Азат» операһы уңышһыҙ булып сыҡты. Шулай итеп, опера һәм балет театры күп йылдар буйына бер ге... нә оригиналь постановка ла бирә алманы.

Композиторҙарға тар бүлмәлә йәшәүҙә... рен бөтөрөргә, халҡ араһына, киң юлға сығырға кәрәк.

Башҡорт государство филармонияһы шулай уҡ ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләй. Уның бригадалары Өфө сәхнәләрендә һәм район... дарҙа бик түбән сифатлы концерттәр ме... нән сығыш яһайҙар.

Шулай уҡ Халҡ ижады йортоноң эше лә ҡәнәғәтләнерлек түгел.

Рус театры башҡорт драматургтарының әҫәрҙәре өҫтөндә эшләмәй.

Драматургтарҙың яҙыусылыҡ оҫталығы һәм актерҙарҙың башҡарыу мастерлеге етешмәй әле.

Юғарылағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү мәсьәләһендә Искусство эштәре управле... ниеһе, яҙыусылар Союзы правлениеһе һәм урындағы партия ойошмалары об... щественность алдында ҙур бурыслылар.

Беҙҙең халҡыбыҙ илебеҙҙең тормошон һәм совет кешеләренең фиҙакәр хеҙмәтен дөрөҫ күрһәтеүсе әҙәбиәткә һәм искусст... воны көтә. Республикабыҙҙың әҙәбиәт һәм искусство работниктәре коммунизм төҙөүсе совет кешеләренең иң яҡшы һы... ҙаттарын һәм характерҙарын сағылдырыу... сы, бөйөк Сталин эпохаһы кешеләре эше... нен һәм ваҡиғаларҙың идея фекерен тә... рән итеп асып биреүсе, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүҙә больше... виктәр партияһына ярҙам итеүсе яңы пьесалар, халҡтар дуҫлығын, абай кеше... ләрҙең үҫешен, Салауат, Матросов кеүек халҡ батырҙарын күрһәтеүсе яңы әҫәрҙәр һәм спектаклдәр бирергә тейештәр. Пар... тия һәм халҡ уларҙан быны шуны көтә.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең идеология мәсьәләләре буйынса булған күрһәтмәлә... рен, Ленин һәм Сталин әҫәрҙәрен өйрә... неү беҙҙең яҙыусыларыбыҙҙың һәм актер... ҙарыбыҙҙың идея кимәлен күтәреүҙә һәм артабан тәрән идеялы, юғары художест... волы әҫәрҙәр ижад итеүҙә ҡеүәтле ҡорал булып тора. Иптәш Сталин әҫәрҙәренең ошо көндәрҙә башҡорт телендә баҫылып сығасаҡ беренсе томы марксистик-ленин... се теорияны тәрәнерәк өйрәнеүҙә тағы ла ныҡыраҡ ярҙам итәсәк.

Иптәш Сәетбатталовтың докладьы бу... йынса ун бер кеше сығып һөйләне.

— Беҙ, йәш артистәр, опера һәм балет театрының яңынан-яңы премьералар би... реүен, юғары сифатлы эшләүен теләйбеҙ, ләкин театрҙың оригиналь әҫәрҙәрҙән ре... пертуары булмау сәбәпле тамашасыға со... вет тормошон күрһәтеүсе яңы спектакль биреүгә өлгәшә алмайбыҙ,—тине Башҡорт опера һәм балет театры артисткаһы ип... тәш Бәйкова.

Рус театрының баш режиссеры иптәш Крутов совет актерҙарының яуаплылығы тураһында һөйләне. Ул рус театры репер... туарында башҡорт драматургтары әҫәр... ҙәренең булмауын ҙур етешһеҙлек тип таныны һәм коллективтың юғары сифатлы спектакль өсөн көрәшеүен әйтте.

Яҙыусы иптәш Әкрәм Вәли театрҙар эшен тәнҡитләп, театр коллективтәре һәм драматургтар большевистик етәксенең об... разын тулы ҡанлы итеп бирә алғандары юҡ әле, большевистик етәксенең образы хәл ителмәне әле,' тине. «Сәғидә», «Иң... рыҙ ҡайын», шулай уҡ башҡа пьесаларҙа ла был образ эшләнеп еткерелмәгән. Яҙыусылар Союзының драма секцияһы драматургтар эшендә юнәлдереүсе ролен үтәмәй.

Башпрофсовет вәкиле иптәш Кукушкин, республикабыҙ хеҙмәтсәндәрен рус яҙыусыларының күренекле әҫәрҙәре ме... нән таныштырыу иҫәр ҡуйылған, баш... ҡорт композиторҙарының йырҙары радио аша ла по...ляр...лаштырыла, яҙыусылар Союзының р...ә секцияһы бөтөнләй насар эшләй, концерттәрҙә бер-ике генә башҡорт бейеүе башҡарыла, бейеүҙәрҙе тәржемә... реү саралары күрелмәй, тине. Художест... волы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәре өсөн ре... пертуарҙы баҫып сығарыуҙың көрәкле... ген әйтте.

Драматург Ибраһим Абдуллин пьеса... ларҙың ысынлап та ашығыс яҙылыуҙа... рын, уларҙың тамашасыны тулҡынлан... дырырлыҡ булмауын тәнҡитләне, дра... матургтарҙың һәм театр коллективтәре... нең әҫәр өҫтөндә бергә эшләүҙәрен һәм композиторҙарҙың пьесалар өсөн музы... каны күберәк яҙыуҙарын теләне. Ул, мәсьәләне тәрән итеп өйрәнмәүебеҙ беҙҙең айырым пьесаларҙы уңышһыҙлыҡҡа кил... терҙе, тине.

Опера һәм балет театрының баш ре... жиссеры иптәш Гингерин, беҙҙең театр репертуар булмау арҡаһында милли спек... такль өҫтөндә эшләүҙән ситтә тора, тип белдерҙе. «Аҡбуҙат» һәм «Ҡарлуғас»тан башҡа опера спектакле юҡ. Өс йыл бу... йына либретто тикшерәбеҙ, ләкин либ... реттистар сәхнәлә ҡуйырлыҡ нәмә бир... мәнеләр әле. Композиторҙар шулай уҡ опера өсөн яңы әҫәрҙәр яҙмайылар. Ком... позиторҙар Союзы былай ҙур формала әҫәрҙәр ижад итеүҙән ситтә йәшәй. Либ... реттистар һәм композиторҙар опера өҫ... төндә эшләүҙә тығыҙ бәйләнештә булыр... ға тейештәр.

Искусство эштәре управлениеһе на... чальниге иптәш Миңнеғәлиев, Башҡорт совет әҙәбиәтен һәм искусствоһын арта... бан үҫтереүҙә байтаҡ эштәр башҡарылыу... ы һәм бик күп етешһеҙлектәр барлығы тураһында һөйләне. Пьеса өҫтөндә эш... ләүсе айырым кешеләр договорҙың сро... гын боҙалар, колхоз-совхоз театрҙарының репертуары бик ярлы, бер актлы пьеса... лар аҙ, скетч өҫтөндә бер кем дә эшлә... мәй, яҙыусылар һәм актерҙар ижады... ның сифаты бик түбән әле, тине ул.

Иптәш Фәтҡуллин Искусство эштәре управлениеһын йәш авторҙар менән эш алып бармауы тураһында тәнҡитләне.

Башҡорт совет яҙыусылары Союзы правлениеһе председателе иптәш Ә. Харисов опера әҫәрҙәре, бер актлы пьеса... лар булдырыу өҫтөндә яҙыусыларҙың, Искусство эштәре управлениеһының һәм Халҡ ижады йортоноң ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләүҙәрен әйтте. Ул яҙыусылар Союзы... ның эшен яҡшыртыу тураһында ВКП(б) Өлкә Комитете ҡарарының әле булһа үтә... леп етмәүе тураһында, драматургтарҙың һәм театрҙарҙың эшендәге етешһеҙлек... тәргә туҡталды.

— Башҡорт композиторҙары опера һәм балет әҫәрҙәре өҫтөндә үҙ алдына эшләй башларға ла тейештәр инде, — тине композиторҙар Союзы правлениеһе пред... седателе иптәш Х. Әхмәтов. — Быныңө өсөн беҙҙә бөтә шарттар тыуҙырылған.

Башҡорт государство академия драма театры директоры иптәш М. Хәбибуллин театр коллективе эшендәге уңыштарға һәм етешһеҙлектәргә туҡталды һәм дра... матургтарҙың яңы сезон өсөн яңы сәхнә әҫәрҙәре биреүҙәрен теләне.

Йыйылышта ҡатнашыусылар ҙур кү... тәренкелек менән бөйөк Сталинға ҡотлау хаты ҡабул иттеләр.

Совхоз лекторийе

Беҙҙең Стәрлетамаҡ орденсолоҡ совхо... зында юғары һәм урта белемле 14 уҡы... тыусы, 15 ауыл хужалығы специалисе, медицина работниктәре һәм башҡа бик күп интеллигенттәр бар.

Беҙ ошо йылдың ғинуарында сов... хоз интеллигенцияһын лекцион эш... кә ылыҡтырыу тураһындағы мәсьә... ләне партия бюроһында тикшерҙек һәм совхоз интеллигенцияһының кәңәш... мәһен йыйып, унда «Идеологик эште кө... сәйтеүҙә беҙҙең бурыстар» тигән мәсьәлә... не ҡуйҙыҡ. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар партия бюроһының ҡарарын хупланылар һәм совхозда даими эшләүсе лекторий ойоштороорға тәҡдим иттеләр. Ошо уҡ кә... ңәшмәлә 17 кешенән торған лекторий ойошторолдо һәм уның эш планы төҙөл... дә. План буйынса биология уҡытыусыһы иптәш Савчукка «Ерҙә тормоштоң бар... лыҡҡа килеүе» тигән темаға, совхоз ди... ректоры иптәш Конкеваға «Мичурин һәм Лысенко — яңы төр үҫемлектәрҙе тыу... ҙырыусылар» тигән темаға, мәктәп дирек... торы иптәш Мурәвьеваға «Америка им... периализменең Кореяға интервенцияһы» тигән темаға һәм башҡа иптәштәргә төр... лө темаларға лекция һәм докладтар әҙер... ләү йөкмәтелде.

Совхоз лекторийе үҙенең эшен шулай башланы. Хәҙер һәр аҙна һайын поли... тик, ғилми-тәбиғи һәм башҡа төрлө те... маларға лекциялар һәм докладтар уҡыла.

Лекторийҙең яңы планына «АҠШ — баш-баштаҡлыҡ һәм көсләү иле», «Фән һәм дин», «Совет халҡы — тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороусы», «Трахома һәм уға ҡаршы көрәш юлдары» тигән һәм башҡа темалар индерелде. Лекциялар совхоз ра... диоузелы аша ла тапшырыла.

Н. Ширяев,
Стәрлетамаҡ орденсолоҡ совхозының партбюро секретаре.

„Кыҙыл Башкортостан“ материалдары буйынса

„Партия мәғарифе селтәренең эшен тәрән яҡтыртырға“

Ошондай исем менән «Кыҙыл Баш... ҡортостан» газетаһының 28 март номе... ...ында районда партия мәғарифе селтәре... ...нең эшен яҡтыртыуға әһәмиәт бирмәүе тураһында «Еңербеҙ» газетаһына (Ғафу... ри районы) матбуғат күҙәтеү баҫылғай... ...ы. Ошо мәҡәләлә ВКП(б)-ның Ғафури район комитете редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Партия мәғарифе селтәренең эшен тәрән яҡтыртырға» тигән матбуғат күҙә... теү ВКП(б) район комитетенең 7 апрелдә булған бюро ултырышына ҡуйылып тик... шерелде. Бюро был мәсьәләлә район га... зетаһына ҡарата булған тәнҡитте бик урынлы тип таныны. Район газетаһының эшен яҡшыртыуға ҡарата конкрет ҡарар ҡабул ителде. Бер үк ваҡытта ВКП(б) район комитете бюроһы «Еңербеҙ» газе... таһы редакцияһының партия мәғарифен яҡтыртыу буйынса эш планын раҫланы».

ВЛКСМ ҮҘӘК КОМИТЕТЕНЕҢ VI ПЛЕНУМЫ

ВЛКСМ Үҙәк Комитетенең ошо көндәр... ...ә булып үткән VI пленумы: «Колхоз, МТС һәм совхоз комсомол ойошмаларының эшен артабан яҡшыртыу саралары ту... ...һында» һәм «Пионерҙарҙың һәм уҡыу... ...сыларҙың йәйге ялына әҙерлектә һәм уны үткәреүҙә комсомол ойошмаларының ...ҡатнашлығы тураһында»ғы мәсьәләләрҙе ...тикшерҙе. Пленум тикшерелгән мәсьәлә... ...лар буйынса тейешле ҡарарҙар ҡабул итте.

Пленумда ҡатнашыусылар ҙур күтә... ...ренкелек менән иптәш Сталинға хат ҡа... ...бул иттеләр.

* * *

ВЛКСМ Үҙәк Комитете секретаре ип... ...тәш Михайловтың беренсе мәсьәлә бу... ...йынса һөйләгән доклады нигеҙендә ҡа... ...бул ителгән ҡарарҙа пленум, колхоз, МТС һәм совхоз комсомол ойошмалары... ...ның бурысы — йәштәрҙе коммунистик ...рухта тәрбиәләү, уның көстәрен социа... ...листик ауыл хужалығын артабан күтә... ...реүгә коммунистар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең сараларын тор... ...мошҡа ашырыу өсөн көрәшкә мобилиза... ...циялау буйынса эште бөтә саралар менән көсәйтеү, тип билдәләне. Комсомол ойош... ...малары ауыл хужалығындағы төп бу... ...рысты — бөтә ауыл хужалығы куль... ...тураларының урожайлылығын байтаҡ күтәреү, общественный малдарҙын, бер үк ваҡытта продукт биреүсәнлеген байтаҡ үҫтереп, уларҙың һанын йылдам рәүеш... ...тә арттырыу бурысын уңышлы хәл итеү өсөн актив көрәшергә тейештәр.

Хәҙерге ваҡытта колхоз, МТС, совхоз комсомол ойошмаларының беренсе нәү... бәттәге бурысы яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙә партия, совет, ауыл хужалы... ғы органдарына актив ярҙам күрһәтеүҙән тора.

Пленум колхоз, МТС һәм совхоз комсо... мол ойошмаларына һәр бер колхозда, сов... хозда, районда общественный малсылыҡ... ты алға ебәреүҙең һәм уның продукт би... реүсәнлеген күтәреүҙең өс йыллыҡ пла... нын үтәү һәм арттырып үтәү эшендә бө... тә ауыл йәштәренең актив ҡатнашыуын таъмин итергә ҡушты. Комсомолдың колхоз ойошмалары, район комитеттәре, өлкә комитеттәре, край комитеттәре, со... юзный республикаларҙың ЛКСМ Үҙәк Ко... митеттәре колхоздарҙы ойоштороу-хужа... лыҡ яғынан артабан ныҡытыу эшендә партия ойошмаларына ярҙам итергә бу... рыслылар.

Район комитеттәре, өлкә комитеттәре, край комитеттәре, союзный республика... ларҙың ЛКСМ Үҙәк Комитеттәре МТС ком... сомол ойошмаларына етәкселекте яҡшыр... тырға, тракторҙарҙы һәм комбайндарҙы яҡшыраҡ файҙаланыу өсөн көрәштә ком... сомолецтарҙың һәм йәштәрҙең актив ҡат... нашлығын таъмин итергә бурыслылар.

Пленум совхоз комсомол ойошмаларына совхоздарҙы бөтә яҡлап алға китеүҙе ауыл... ...дынғы хужалыҡтарға әйләндереү эшендә партия ойошмаларына һәм директорҙарға актив ярҙам күрһәтергә мәжбүр итте.

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе грандиоз планды үтәүҙә актив ҡатнашыу — бөтә комсомолдың почетлы бурысы. Пленум комсомол ойошмаларын баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу планын үтәүгә һәм арттырып үтәүгә өл... гәшергә мәжбүр итте.

Иптәш Сталин инициативаһы буйынса Совет хөкүмәте тарафынан коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен төҙөү тураһында ҡа... бул ителгән ҡарарҙарҙың бөйөк тарихи әһәмиәтен айырыуса билдәләп, пленум йәштәрҙе ошо төҙөлештәрҙә актив ҡатна... шырға, план тарафынан билдәләнгән тө... ҙөлеш эштәренең уңышлы үтәлеүе һәм арттырып үтәлеүе өсөн бөтә саралар ме... нән булышлыҡ итергә, йәштәрҙең төҙө... лешкә тиҙләтеүгә юнәлтелгән патриотик инициативаһының күп төрлө башланғыс... тарын яҡларға саҡырҙы.

Комсомол ойошмалары ауыл йәштәре... нең дөйөм белем кимәлен күтәреү эшен көсәйтергә, фән ҡаҙаныштарын һәм ал... дынғы тәжрибәләрҙе пропагандалауҙы ар... табан йәйелдереүҙә һәм уларҙы ауыл ху... жалығы производствоһына киң күләмдә индереүҙә, агрозоотехник уҡыу ҡуйылы... шын яҡшыртыуҙа бөтә саралар менән партия, совет, ауыл хужалығы органда... рына ярҙам күрһәтергә тейештәр.

Пленум район комитеттәренә, өлкә ко... митеттәренә, край комитеттәренә, союз... ный республикаларҙың ЛКСМ Үҙәк Коми... теттәренә комсомолецтарҙың һәм йәштәр... ҙең политик уҡыуын ойоштороуҙа һәм уның йөкмәткеһендә, ауыл йәштәре ара... һында лекцион эштең ҡуйылышында бул... ған кәмселектәрҙе бөтөрөргә тәҡдим итте. Комсомол ойошмалары ауылда культура эшендә, массовый физкультура һәм спорт эшен яҡшыртыуҙа ауыл йәштәренең ак... тив ҡатнашлығын таъмин итергә тейеш... тәр.

Пленум комсомолдың эске эше өлкәһен... дә төп иғтибарҙы колхоз, МТС һәм сов... хоз тәүге комсомол ойошмаларын бөтә са... ралар менән артабан ныҡытыу бурыста... рына, ВЛКСМ члендәренең активлеген күтәреүгә, алдынғы ауыл йәштәренең киң ҡатламын комсомолға йәлеп итеү бу... йынса эште көсәйтеүгә йүнәлергә кәрәк... леге билдәләне. Һәр бер колхоз, МТС, совхоз тәүге комсомол ойошмаһының сис... тематик үҫеүен таъмин итергә, уларға район комитеттәре, өлкә комитеттәре, край комитеттәре һәм союзный республикалар... ҙың ЛКСМ Үҙәк Комитеттәре тарафынан етәкселекте яҡшыртырға кәрәк.

Пленум комсомолецтарҙы, бөтә ауыл йәштәрен беҙҙең бөйөк социалистик Тыуған илебеҙҙең артабан еҫкә атыуы, Ленин — Сталин эше тантанаһы хаҡы... на ныҡышмалы эшләргә саҡырҙы.

«Пионерҙарҙың һәм уҡыусыларҙың йәйге ялына әҙерлектә һәм уны үткә... реүҙә комсомол ойошмаларының ҡатнаш... лығы тураһында» ВЛКСМ Үҙәк Комите... те секретаре иптәш Ершованың докладьы буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙа пленум балаларҙың йәйге ялын ойоштороу ком... сомолдың мөһим эше булып тора, тип билдәләне.

Өлкә комитеттәре, край комитеттәре, союзный республикаларҙың комсомол Үҙәк Комитеттәре халҡ мәғарифе орган... дары һәм профсоюздар менән берлектә 1951 йылдың йәйендә пионерҙарҙың һәм мәктәптә уҡыусы балаларҙың ялына ойошҡан рәүештә әҙерләнеүҙе һәм үт... кәреүҙе таъмин итергә бурыслылар.

Район комитеттәре, ҡала комитеттәре, өлкә комитеттәре, край комитеттәре, союзный республикаларҙың ЛКСМ Үҙәк Комитеттәре профсоюздар, халҡ мәғарифе һәм һаулыҡ һаҡлау органдары менән берлектә ҡала ситендәге һәр бер пионер лагеренең балаларҙы ҡабул итеүгә үҙ ваҡытында һәм тулыһынса әҙерләгән таъмин итергә тейештәр.

Пленум йәйге кәнҡә ҡалала ҡаласаҡ балаларҙың ялын ойоштороу бик ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеген билдәләне. Ҡа... лала пионерҙар лагерен ойоштороуҙы киң ҡулланырға кәрәк.

Пленум комсомол ойошмаларының иғ... тибарын лагерҙарҙа күп төрлө политик тәрбиә, культура-массовый, шулай уҡ физкультура һәм спорт эштәрен ойошто... роуға кәрәклеккә юнәлтте. Пленум шу... ның менән бергә балаларҙың ялына һәм һаулығына зыян килтерерлек һәр төрлө массовый сараларҙы күп йөкмәтеүгә юл ҡуймау кәрәклеген иҫкәртеп үтте.

Өлкән класстарҙа уҡыусыларҙың ялы... на, улар өсөн туристик лагерҙар селтәре ойоштороуға, массовый спорт саралары үткәреүгә иғтибар бүлергә кәрәк. Райком... дар, обкомдар, крайкомдар, союзный рес... публикаларҙың комсомол Үҙәк Комитеттә... ре массовый саралар тураһында ла хәстәр... лек күрергә тейештәр. Район комитеттәре, өлкә комитеттәре, край комитеттәре, со... юзный республикаларҙың комсомол Үҙәк Комитеттәре ауыл ерҙәрендә йәшәүсе ба... лаларҙың ялын ойоштороу тураһында ла хәстәрлек күрергә тейештәр.

Пленум өлкә комитеттәрен, край коми... теттәрен, союзный республикаларҙың комсомол Үҙәк Комитеттәрен балалар йорттарында тәрбиәләнеүселәрҙең йәйге ялын ойоштороу эшендә актив ҡатна... шырға мәжбүр итте.

Комсомол ойошмалары йәйге осорҙа балаларға һауыҡтырыу майҙандары булдырыуҙа халҡ мәғарифе һәм һаулыҡ һаҡлау органдарына ярҙам итергә тейеш... тәр. Уҡыусы балаларҙың йәйге ялына әҙерлектә һәм уны үткәреүҙә мәктәптән тыш учреждениеларҙың актив ҡатнашы... уын таъмин итергә кәрәк.

Район комитеттәренең, ҡала комитет... тәренең, өлкә комитеттәренең, край ко... митеттәренең һәм союзный республика... ларҙың ЛКСМ Үҙәк Комитеттәренең секре... тарҙәре, бюро члендәре пионер лагерҙәрендә йышыраҡ булырға тейештәр. Пионерҙар... ҙең һәм уҡыусыларҙың йәйге ялын ойош... тороу мәсьәләләре район комитеттәренең, ҡала комитеттәренең, өлкә комитеттәре... нең, край комитеттәренең һәм союзный республикаларҙың ЛКСМ Үҙәк Комитеттә... ренең бюро ултырыштарында систематик тикшерелергә тейеш.

Ботаника баҡсаһының теплицаларында яҙғы эштәр киң ҡолас алды.
Һүрәттә: Өфөләге ботаника баҡсаһы эшсеһе П. Лобанова гөлдәр ҡарай.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

ТӨҮГЕ ҺАЛДАР

Танып леспромхозы коллективе социалистик ярыштың бөтә киңлегендә йәйелдереү һәм хеҙмәтте механизациялаштырыу һөҙөмтәһендә яр буйҙарына ағас ташыу эшен быйыл ҙур өлгәшкәнлек менән үтәне. [illegible]

Был эште ҡыҫҡа срокта уңышлы башҡарыу өсөн леспромхозда күп кенә әҙерлек эштәре үткәрелде. Тракторҙарға махсус буферҙар, блоктар әҙерләнде, [illegible] магистралдәрҙә көймәләр менән кешеләр билдәләнде, [illegible] катерҙәре ҡуйылды. Техник хәүефһеҙлек буйынса бөтә эшселәр һәм ял ағыҙыусылар менән семинар үткәрелде. Конторының һәр бер [illegible] бер медицина работнигы билдәләнде, запас медикаменттар бирелде һәм урында дөйөм туҡланыу булдырылды.

Май алды ярышына ҡушылып, [illegible] стахановсы [illegible] эшселәре коммунизм төҙөлештәренә оҙатылаҫаҡ төүге һалдарҙы Танып йылғаһына төшөрҙөләр.

Х. Сафин.

Тамашасылар конференцияһы

Кушнаренко. Ошо көндәрҙә район үҙәгенең кинотеатр бинаһында тамашасыларҙың конференцияһы булып, унда 200-ҙән артыҡ кеше ҡатнашты.

Конференцияла «Совет киноһының үҫеш юлдары» тигән темала ВКП(б) район комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире иптәш Тимофеев доклад һөйләне. Унан һуң «1951 йылдың беренсе кварталында кино селтәрҙәренең эше тураһында» район кинофикация бүлеге начальнигы иптәш Салыковтың докладын тыңланылар.

Н. Гарев.

АҒАС УЛТЫРТАЛАР

Бишбүләк районы «Коммунар» ауыл хужалыҡ артеленең члендәре тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинса планын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшәләр. Был колхоз члендәре районда беренсе булып ағас ултыртта башланылар һәм тәүге көндә уҡ ике гектар майҙанда ағас ултырттылар.

КҮП ЙЫЛЛЫҠ ҮЛӘН ОРЛОҠТАРЫ СӘСЕҮҘЕ ҺУҘМАҪҠА

Сәсеү әйләнеше баҫыуҙарында күп йыллыҡ үләндәр бесән буйынса юғары урожай биргән саҡта ғына, агротехника һәм хужалыҡ яғынан үләндәрҙе сәсеүҙең әһәмиәте аҡлана ала. Тупраҡ структураһын яҡшыртыу һәм уңдырышлылығын күтәреү өсөн күп йыллыҡ үләндәрҙең һәр гектарынан кәмендә 50 — 60 центнер бесән урожайы алыуға өлгәшергә кәрәк. Быны шулай уҡ колхоздарҙың үҫә барған общественный малсылығы ла талап итә.

Агрономия фәне һәм алдынғы тәжрибәләр күп йыллыҡ үләндәрҙең һәр гектарынан 60 — 70 центнер һәм унан да күберәк бесән урожайы алыуҙың мөмкинлеген раҫлай. Бының өсөн күп йыллыҡ үләндәрҙең бесән һәм орлоҡ урожайын күтәреүҙе тәьмин итә торған агротехник саралар системаһын тормошҡа ашырырға кәрәк.

Республикабыҙ колхоздары быйыл 100 мең гектар самаһы күп йыллыҡ үләндәр сәсергә тейештәр. Был майҙандың күпселеген яҙғы осорҙа һәм ҡалған өлөшөн йәйге һәм көҙгө осорҙа сәсеү планлаштырылған. Урожайҙың юғары булыуы үлән орлоҡтарының үҙ ваҡытында һәм яҡшы сифатлы итеп сәселеүенә бәйле булып тора. Яҙғы осорҙа уны иртә сроктарҙа, агротехник талаптар нигеҙендә сәсергә кәрәк.

Хәҙер республикабыҙҙа, бигерәк тә ялан райондарында баҫыу эштәре киң йәйелдерелде. Үлән орлоҡтары сәсеү өсөн хәҙер иң яҡшы сроктар килде. Был баҫыу эштәре башланғандан алып 2-3 көн эсендә тамамланырға тейеш. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күпселек райондарҙа үлән орлоҡтарын сәсеү аҡрын бара әле.

Айырым райондар государство тарафынан һатылып бирелгән үлән орлоҡтарын алыуҙы ойоштормайҙар. Абҙан, Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла, Мәләүез, Кушнаренко һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың колхоздары ошо көнгә тиклем бер генә килограмм да үлән орлоғо алмағандар. [illegible]

[illegible]

[illegible] ған майҙанда бактериялы ашламалар ҡулланылды. Нитрагин менән ашланған майҙандың һәр гектарынан 165 килограмм, ә был ашлама ҡулланылмаған майҙанда һәр гектарҙан 129 килограмм люцерна орлоғо урожайы алынды. Яҙғы осорҙа урынлағы нитрагин индерелгән майҙандың һәр гектарынан 510 килограмм орлоҡ урожайы йыйылды. Бында шулай уҡ бесән урожайы ла юғары булды.

Колхоздарҙың тәжрибәләре лә люцерна һәм клевер сәскән ваҡытта тупраҡҡа нитрагин индереүҙең файҙалы булыуын күрһәтәләр. Тимәк, үлән урожайын күтәреүҙәге был резерв тулыһынса файҙаланылырға тейеш. Бындай ашламалар индереүҙе, беренсе нәүбәттә, люцерна, клевер һәм эспарцет орлоҡтары сәсеүҙә ҡулланырға кәрәк.

Хәҙер сельхозснаб складтарында бик күп нитрагин бар. Уның менән унар меңләгән гектар майҙанды ашларға мөмкин. Был ашламалар, башлыса, ҡуҙаҡлы культуралар өсөн ҡулланылырға тейеш. Бөрө, Дүртөйлө, Мишкә, Мәләүез, Иглин һәм башҡа райондарҙың колхоздары бындай ашламаларҙы ташып алыу эшен айырыуса насар ойошторғандар. Хәҙер, һис кисекмәҫтән, бактерия ашламаларын ташып алыуҙы һәм уларҙы күп йыллыҡ үләндәр сәсеүҙә ҡулланыуҙы ойошторорға кәрәк. Был ябай агротехник сара ҡуҙаҡлы күп йыллыҡ үләндәр урожайын байтаҡ күтәреүгә, орлоҡ һәм бесәнде күп итеп йыйнап алыуға ярҙам итәсәк.

Ошолар менән бер рәттән, күп йыллыҡ үләндәрҙе сәсеү әйләнеше баҫыуҙарында дөрөҫ урынлаштырыу талап ителә. Үләндәр таҙа тупраҡҡа һәм кондициялы орлоҡтар менән сәселергә тейеш. Аҡтамыр һәм башҡа шундай ҡый үләндәре менән сүпләнгән баҫыуҙарға күп йыллыҡ үләндәрҙе сәсергә ярамай. Ҡыйланған баҫыуҙарҙа үлән сәсеүлектәренең һәләк буласағын ныҡ хәтерҙә тоторға кәрәк. Шуға күрә сәсеү әйләнешендә күп йыллыҡ үләндәрҙе яҙ менән ужым культуралары аҫтына сәсергә йәки яҡшы эшкәртелгән ҡара пар йәки тунга һөрөлгән майҙанға сәселә торған яҙғы культуралар аҫтына сәсергә кәрәк. Ҡаплаусы һәм ҡаплауһыҙ культуралар итеп сәскәндә күп йыллыҡ үләндәр орлоҡсолоғо өсөн иң уңдырышлы тупраҡлы, дымлы ҡара пар майҙандары бүленергә тейеш. Күп йыллыҡ үләндәр майҙанын ашлау өсөн урындағы һәм минераль ашламаларҙы киң рәүештә ҡулланырға кәрәк. Әгәр ҙә ул көҙҙән индерелмәһә, уны тупраҡҡа [illegible]

[illegible] күп йыллыҡ үләндәрҙе һәм көҙгө сәсеүгә лә әҙерләргә кәрәк. Быны бөтә иртә пар һөрөргә, ҡара пар өсөн участкалар бүлергә, етерлек күләмдә орлоҡ булдырырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта үлән сәсеүлектәрен яҙғы тәрбиәләүҙе ойоштороу талап ителә. Бөтә был эштәр күп йыллыҡ үләндәрҙән бесән һәм орлоҡ буйынса юғары урожай алыуға алып барасаҡ. Был колхоздарҙа үлән баҫыулы сәсеү әйләнештәрен үҙләштереүҙе тәьмин итеүгә ярҙам итер.

Агроном Ғ. Ашимов.

Норманы арттырып үтәйҙәр

Учалы районы «Октябрь» колхозында юғары урожай алыу өсөн көрәш киң йәйелдерелде.

Колхоздың бөтә баҫыусылыҡ бригадалары ла яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа сроктарҙа, юғары агротехник кимәлдә үткәрергә һүҙ биреп, Май алды социалистик ярышына ҡушылдылар. Сәскес машиналарында эшләүсе Ҡәйүмов һәм Сафин иптәштәр көнөнә, 4 гектар урынына, 6-7 гектар майҙанда сәсергә йөкләмә алдылар. Хәҙер баҫыуҙарҙа ҡыҙыу эш бара.

З. Әһлиуллин.

Өфөлә яңы гастроном магазины

Главгастрономдың Башҡортостан контораһы Өфө ҡалаһының Сталин урамында яңы гастроном магазины асты. Ул бик яҡшы һәм матур итеп йыһазландырылған.

Магазинда бөтәһе 7 бүлек: икмәк-булка, һөт-май, кондитер изделиелары, төрлө виналар, балыҡ-консерва, тәмәке-папирос һәм алкоголһеҙ эсемлектәр бүлектәре эшләй. Магазин тәүге бер көндә генә 58 мең һумлыҡ продукт һатты.

А. Харисов.

Яҙғы йылы көндәр башланды. Парктар һәм баҡсалар асылыр көн бик яҡын.
Һүрәттә: Өфө ҡалаһының А. Матросов исемендәге культура һәм ял паркының аллеяларын таҙарталар.

В. Бородулин фотоһы.

КОЛХОЗДА ТӨҘӨЛӨШ БРИГАДАҺЫ

Әбйәлил районы Калинин исемендәге колхозда быйыл ҙур төҙөлөш эштәре үткәреү планлаштырылды. Бында тәүҙә быҙауҙар, бәрәстәр, һарыҡтар өсөн стандарт торлаҡтар төҙөләсәк.

Колхозда төҙөү эштәре өсөн 51 кешенән төҙөү бригадаһы ойошторолдо, бригадаға 10 ат һәм сбруйҙар беркетелде. Төҙөү бригадаһы өсөн бина һәм усадьба билдәләнде. Унда столяр мастерскойы, инструменттар һәм инвентарҙар өсөн склад, төҙөү материалдарын һаҡлау өсөн ялма төҙөләсәк.

Бригада составына тәжрибәле балта осталарынан Нигмәтуллин һәм Ғәлиуллин, үҙ эштәрен яҡшы белеүсе столярҙарҙан Мансуров, Хәйретдинов һәм мейес һалыусы Фоҡеев иптәштәр һәм башҡалар инәләр.

Колхозсылар төҙөлөш бригадаһы бригадиры итеп комсомол комитеты секретары иптәш Мәхмүтовты билдәләнеләр. Был бригада төҙөү эштәрен башланы ла инде. Бригада көсө менән 400 кубометр ағас, колхозды радиолаштырыу һәм телефонлаштырыу өсөн 350 бағана, фундаменттар һалыу өсөн 298 кубометр таш әҙерләнде.

Колхоз правлениеһы һәм партияның тәүге ойошмаһы төҙөү эштәре өсөн йәш кадрҙарҙы практик эштә әҙерләү сараһын күрәләр. Был мәҡсәт менән тәжрибәле балта осталарына, мейес һалыусыларға һәм башҡа специалистарға бригаданың йәш члендәре беркетеләләр.

Төҙөү материалдары әҙерләү планы һәм 1951 йылдың төҙөү планы бригаданың дөйөм йыйылышында тикшерелде. Төҙөүселәр, Май алды социалистик ярышына ҡушылып, төҙөлөш эштәрен киң йәйелдерәләр.

С. Петухов,

ВКП(б)-ның Әбйәлил райкомы секретары.

Колхозсылар тырышып эшләйҙәр

Саҡмағош районы «Трактор» колхозы члендәре Май алды социалистик ярышына ҡушылып, баҫыуҙа тырышып эшләйҙәр. Колхозда тәүге көндә 1,5 гектар майҙанда имән сәтләүектәре ултыртылды, 25 гектар күп йыллыҡ үлән сәсеүлеге тырматылды, 100 гектар ужым өҫтәмә ашыҡландырылды.

Ғ. Насиров.

ВФП-ның тороу урыны тураһында Профсоюздарҙың Бөтә Донъя Федерацияһы секретариатының коммюникеһе

ВЕНА, 19 апрель. (ТАСС). Профсоюздарҙың Бөтә Донъя Федерацияһының (ВФП) секретариаты тарафынан иғлан ителгән коммюникела былай тип әйтелә:

Профсоюздарҙың Бөтә Донъя Федерацияһының башҡарма бюроһы үҙенең һуңғы сессияһында ВФП-ның Парижда йәшәүен тыйыу тураһында фашистик характерҙағы бойороҡ һөҙөмтәһендә килеп тыуған хәлде ҡараны. Ул ВФП секретариатына ВФП-ның яңы урыны тураһында кәрәкле ҡарар ҡабул итергә һәм уның өҙлөкһөҙ эшләүен тәьмин итергә полномочие бирҙе.

Профсоюздарҙың Бөтә Донъя Федерацияһының секретариаты бөтә илдәрҙәге профсоюздарҙың Франция хөкүмәтенең декретына ҡаршы йүнәлтелгән күп һанлағы протестары һәм демонстрациялары ВФП-ның бөтә донъялағы профсоюз члендәренең күпселегенең ҙур ышанысы һәм яҡлауы менән файҙаланыуын күрһәттеләр, тип билдәләй.

ВФП секретариаты төрлө илдәрҙең профсоюз ойошмаларынан тейешле илдәрҙә ВФП-ның яңы урынын билдәләргә саҡырған күп һанлы тәҡдимдәр алды.

Айырым алғанда, ВФП секретариаты федерацияның яңы урыны тураһындағы мәсьәләне хәл иткән ваҡытта уны Австрияла урынлаштырыу мөмкинлегенең иғтибарға алыныуына ҡарата Австриялағы күп кенә фабрика-завод профсоюз комитеттарының тәҡдимен ҙур [...] нән ҡараны.

Вена ҡалаһында, бигерәк тә географик хәле арҡаһында, [...] ның нормаль эше өсөн булған [...] тәрҙе, шулай уҡ федерация [...] хеҙмәтсәндәре тарафынан [...] яҡшы ҡабул итеүҙе иғтибар[...] ВФП секретариаты 1951 йыл[...] 18 апрелендә Венала[...] рышында Профсоюздарҙың Бөтә [...] Федерацияһының яңы урынын [...] ҡалдырыу тураһында ҡарар ҡа[...] ВФП пролетар интернационализм[...] мәтсәндәренең халыҡ-ара солидар[...] ғоларын күрһәткән өсөн Австрия [...] сәндәренә һәм, бигерәк тә, Вена [...] хеҙмәтсәндәренә ҡайнар рәхмәт [...]

Ошо коммюникене алыу [...] алып ВФП секретариаты бөтә [...] түбәндәге адреска ебәреүҙе һорай: [...] союздарҙың Бөтә Донъя Федерац[...] Генеральный секретарына, Зейле[...] 3, Вена, 1, Австрия.

ВФП секретариаты милли [...] үҙәктәрен, бөтә профсоюз ойош[...] һәм бөтә донъяның эшселәр [...] хеҙмәтсәндәрҙең талаптарын ҡ[...] дереү, социаль ғәҙеллек, азатлыҡ, [...] халыҡтар араһында оҙаҡҡа һуҙыл[...] лы тыныслыҡ өсөн ВФП ар[...] арымай-талмай көрәшәсәк, тип [...]

Вена, 18 апрель, 1951 йыл.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 19 апрель (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары 19 апрелдә үҙҙәренең 33-сө ултырышына йыйылдылар. Председателлек итте Франция вәкиле Пароди.

Билдәле булыуынса, СССР вәкиле Громыко алдағы ике ултырышта яһаған үҙенең сығыштарында көнбайыштағы өс держава вәкилдәре тарафынан 17 апрелдә тапшырылған көн тәртибенең яңы проектының асылы буйынса күп кенә иҫкәртеүҙәр яһағайны. Үҙенең сығыштарында Громыко, көн тәртибенең беренсе пунктының өс делегация тарафынан 17 апрелдә тәҡдим ителгән яңы формулировкаһы, асылда, көнбайыш державаларҙың делегациялары 2 апрелдә индергән формулировканан айырылмай, тип белдергәйне. Иҫке формулировкалағы кеүек үк, яңы формулировкала ла, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы төп мәсьәлә ҡоралланыуҙар кимәле тураһындағы мәсьәләгә буйһондоролған. Бынан тыш, дүрт державаның,—СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франциянын ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу бурысы ғөмүмән ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә менән алмаштырыла, был, Громыко һыҙыҡ өҫтөнә алып үткәнсә, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне буш декларацияларға ҡайтарып ҡалдырыуҙы аңлата.

Көнбайыш державаларҙың делегациялары тарафынан тапшырылған көн тәртибенең яңы проекты айҡанлы үҙенең сығыштарында Громыко шулай уҡ, был проект Атлантик пакт тураһында[...] Англияла, Норвегияла, Исландия[...] Европаның башҡа илдәрендә, шулай[...] Яҡын Көнсығышта Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне[...] был мәсьәлә дүрт держава ара[...] мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу өсөн [...] әһәмиәткә эйә булһа ла, министр[...] тикшереүен күҙҙә тотмай, тип билд[...] Шул уҡ ваҡытта СССР вәкиле Гро[...] Атлантик пакт һәм сит территория[...] Американың хәрби базалары тураһ[...]ғы мәсьәләне индермәгән теләһә [...] көн тәртибе ҡәнәғәтләндерерлек тип [...] алмай, тип күрһәтте.

Өс держава вәкилдәре тарафын[...] апрелдә индерелгән көн тәртибенең [...] проектының асылы буйынса алда[...] тырыштарҙа СССР вәкиле Громыко[...] рыла әйтелгән иҫкәртеүҙәрҙе иҫәпкә [...] рамаҫтан, Джессеп, Дэвис һәм Пароди [...] апрелдәге ултырышта ниндәй ҙә [...] белдереүҙәр яһауҙан тыйылып ҡалды[...]

СССР вәкиле Громыко, Триест [...] һындағы мәсьәлә буйынса бынан өс [...] сә ваҡыт элек совет делегацияһы та[...] фынан тәҡдим ителгән һәм «Италия [...] нән тыныслыҡ договорының Триест[...] ҡағылған өлөшөн үтәү тураһында» [...] әйтелгән формулировканы көнбайыш[...] өс держава вәкилдәре ҡабул итә ал[...] мы, тип һораны.

АҠШ вәкиле Джессеп, «көн тәрт[...] тотош алғанда килешелгән» шарт[...] был пункттың СССР делегацияһы та[...] фынан килтерелгән редакцияһына [...] килешмәйәсәк, тип белдерҙе.

Унан һуң Франция вәкиле Пароди[...] тәҡдиме менән ултырышты айыра[...] рап ителде.

Киләһе ултырыш 20 апрелгә [...] нелде.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 19 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 19 апрелдә, фронттың көнсығыш һәм үҙәк участкаларында Халыҡ армияһының частары, Ҡытай добровольцтарының отрядтары менән берлектә, 38-се параллелдән төньяҡтараҡ дошманға ҡаршы ҡаты һуғыш алып барыуҙы дауам итәләр, тип хәбәр итте.

Үткән аҙнала Халыҡ армияһының частары дошмандың 5.200-ҙән артығыраҡ һалдатын һәм офицерын, шул иҫә[...] 2.500 самаһы Америка кешеһен үлтер[...]ләр һәм яраланылар; 11 танкын һәм [...] автомашинаһын юҡ иттеләр.

Дәһшәтле кеше һәм техникала ҙур [...] юғалтыуҙар яһауға ҡарамаҫтан, [...] төньяҡҡа табан алға барыуҙы дауам [...] тәрә.

18 апрелдә Халыҡ армияһының [...] көнбайыш яр буйында дошмандың [...] молетын атып төшерҙеләр.

Испанияла яңы забастовкалар

ПАРИЖ, 19 апрель. (ТАСС). Испаниялағы забастовкалар, франкистик полицияның терроруна ҡарамаҫтан, туҡталмайҙар.

Барселонаға яҡын ерҙә урынлашҡан Манрес ҡалаһында бынан бер нисә көн элек «Бертран и серра» туҡыу фабрикаһының эшселәре, эш хаҡын арттырыуҙы талап итеп, баш күтәргәндәр. «Юманите» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 18 апрелдә забастовка[...] ҡаланың бөтә туҡыу предприятие[...] таралған.

Франкистик хөкүмәт забастовка[...]ған фабриканың ҡапҡаларын ябыр[...] улар янына полиция һағын ҡу[...] бойороҡ биргән. Был сара Каталония хеҙмәтсәндәренең тәрән нәфрәтен [...] ҡырҙы. Провинцияның күп кенә [...] ларында яңы забастовкалар башла[...]

Гитлерселәр Көньяҡ Африка союзының хөкүмәтенә хеҙмәт итәләр

ЛОНДОН, 19 апрель. (ТАСС). «Таймс» газетаһының Йоганнесбургтағы хәбәрсеһенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, гитлерсе авиация өсөн самолеттар эшләүсе элекке конструктор Мессершмитт хәҙер Көньяҡ Африка союзында Йоганнесбургҡа яҡын урында ҙур авиация заводы төҙөргә уйлай. «Таймс» хәбәрсеһе, Мессершмитт Көньяҡ Африка союзының хөкүмәтенән һөйләшеүҙәр алып барған, [...] рышында Мессершмитт тәҡдиме[...] ланылған һәм ул был завод өсөн [...] довониелар индереүгә рөхсәт ала[...] раҫлай.

Редактор Ғ. Ғ. ҒА[...]

БЫУАЛАР ҺӘМ ҺЫУ ЯТҠЫЛЫҠТАРЫ ТӨҘӨҮГӘ СЕРЬЕЗ ИҒТИБАР

Колхоз ҡоролошо яңы техниканы һәм фән өлгәшеүҙәрен ауыл хужалығында киң ҡулланыу өсөн сикләнмәгән мөмкинлектәр тыуҙырҙы. Урожайлылыҡты һәм ауыл хужалығында хеҙмәт етештереүсәнлеген тағы ла йылдамыраҡ күтәреү өсөн кәрәкле шарттар барлыҡҡа килде. Был айҡанлы техниканың, башлыса, төҙөлештә һәм хеҙмәттең күп хеҙмәт талап иткән процестарын механизациялауҙа роле ҡырҡа күтәрелә.

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың бөйөк сталинса планы уңышлы тормошҡа ашырыла. Был планда быуалар, һыу ятҡылыҡтары һәм һуғарыу системаларын төҙөүгә ҙур әһәмиәт бирелә. 1950—1955 йылдар осоронда Башҡортостан колхоздарында һәм совхоздарында 400 быуа һәм һыу ятҡылығы төҙөү күҙҙә тотола. Хәҙерге көндә Башҡортостан территорияһында 695 быуа һәм 206 һыу ятҡылығы бар. Уларҙың бөтәһе лә илгәҙә сталинса биш йыллыҡтар йылдарында төҙөлгәндәр. Һуңғы ике йыл эсендә генә 500 гектар майҙанда 108 быуа төҙөлдө.

1950 йылда төҙөлгән быуаларҙың күбеһе эштәрҙең күләме яғынан бәләкәй булһа, шулай уҡ һыу өҫтө майҙаны буйынса ла уртаса быуаларҙан таҫтаҙлаған ташҡырға өҫтөн булған ҙур гидротехник ҡоролмаларҙы ташкил итәләр. Әлшәй районының «Таймыр» колхозында 38 гектар майҙанда быуа төҙөлдө. Федоровка районының Ленин исемендәге колхозында ошондай уҡ быуа һәм Дәүләкән районының Маленков исемендәге, Бүздәк районының «Ҡыҙаш» Стәрлебаш районының Молотов исемендәге колхоздарында бәләкәйерәк күләмдәге бер нисә быуа төҙөлдө.

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың бөйөк сталинса планын тормошҡа ашырыу эшендә колхоздарға һәм совхоздарға ашлекле ярҙам күрһәтеү өсөн Башҡортостанда баҫыу һаҡлаусы урман үҫтереү буйынса биш станция төҙөлдө. Улар иң яңы механизмдар — кеүәтле экскаваторҙар, скреперҙар, ауыр типтағы грейдерҙар, бульдозерҙар һәм башҡа механизмдар менән байыҡтырылғандар. Станцияларҙың өсәүһе, ике йыл эшләп, үҙҙәрен тулыһынса аҡланылар һәм айырыуса күп хеҙмәт талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыуҙа колхоздарға ҙур ярҙам күрһәттеләр. Ике станция быйыл эшләй башлаясаҡ.

ЛЗС зоналарында быуалар, һыу ятҡылыҡтары һәм һуғарыу участкаларын төҙөгән ваҡытта ер эштәре быйыл тулыһынса механизациялаштырыласаҡ. Был эштең масштабын күҙ алдына килтереү өсөн шуны әйтеү ҙә етә. ЛЗС механизмдары тарафынан үтәлергә тейеш булған тик бер ер эштәренең дөйөм күләме генә 1 миллион кубометр самаһы ташкил итә. Төҙөлгән быуаларҙа тегеләйен был дәрәжәлә балыҡ үрсетелә. Ләкин уларға ла продуктивле балыҡтар ғына ебәрелгән. Шуға күрә бурыс ҡыҫҡа ваҡыт эсендә был быуаларҙа сазан, аҡ табан балығы, ҡара балыҡ кеүек тиҙ үрсеүсе һәм ашыҡҡа талапсан булмаған, юғары продуктивле балыҡтар үрсетеүҙән тора. Быуаларҙа алабуға, әтеш, суртан кеүек йыртҡыс балыҡтарҙы үрсетеүгә юл ҡуйырға ярамай.

Башҡортостандың күп кенә йылғаларында ашыҡ, һыу, температура һәм гидрогеологик режим юғары рентабелле сыбар балыҡтар үрсетергә мөмкинлек бирәләр. Күп кенә йылғаларҙың төптәре ташлы һәм ҡомло, һыуҙың көн һайын тиҙерлек алмашыныуы тороуы, кислотаның аҙ булыуы, һыуҙа тимерҙең булмауы һәм температураның 15 градустан юғары булмауы сыбар балыҡ үрсетеү өсөн һәм балыҡ хужалығының был тармағын колхоздар өсөн файҙалы сараға әүерелдереүгә ыңғай шарттар тыуҙыра.

Быуалар балыҡ үрсетеүҙән тыш һыуҙа йөҙөүсе ҡоштар үрсетеү өсөн дә файҙаланылырға тейештәр. Иңкин айырыуса һыуҙа йөҙөүсе ҡоштарҙың иң яҡшы тоҡомо булып иҫәпләнә, ул һыу флоралары һәм фауналары иҫәбенә быуаларҙа үҙен ашыҡ менән тулыһынса тәьмин итә белә, шул уҡ ваҡытта ул балыҡтарҙың да продукт биреүсәнлеген кәметмәй. Практика колхоздарҙа һәм совхоздарҙа балыҡтар һәм һыуҙа йөҙөүсе ҡоштар үрсетеү буйынса яҡшы ҡуйылған эштең быуаны төҙөү буйынса бөтә расходтарҙы иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ҡаплауын күрһәтә.

Колхоз быуаларын балыҡтар менән тәьмин итеү өсөн Благовещен районында государствоның балыҡ питомнигы төҙөлдө. Ул йылына 140 мең дана аҡ табан балығы етештерә ала. Быйыл ул балыҡ питомнигы эксплуатацияға тапшырыласаҡ һәм продукция бирәсәк. Бөрө районының Молотов исемендәге колхозында бәләкәйерәк күләмдәге балыҡ питомнигы бар. Ул йыл һайын 30 — 40 мең сазан һәм табан балығы бирә ала. Ләкин был балыҡ питомниктары ғына әлеге-әле үҫә барған быуалар майҙанын ҡәнәғәтләндерә алмайҙар.

Ауыл хужалығы работниктары алдында яңы балыҡ питомниктарын ойоштороу тураһындағы мәсьәлә бөтә киҫкенлеге менән килеп баҫа.

Башҡортостанда быуалар һәм һыу ятҡылыҡтары төҙөү планын уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн ҙур перспективалар — йылғаларҙың ҡуйы селтәре, бик күп соҡорҙар бар. Яуым-төшөмдәр ҙә бик күп була. Был һуғарыу майҙанын киңәйтергә һәм балыҡ, һыуҙа йөҙөүсе ҡоштар үрсетеү өсөн уңай шарттар тыуҙыра.

Быйыл быуалар төҙөүҙең алдынғы техникаһының талаптарына яуап биреүсе 70 быуа һәм һыу ятҡылығы төҙөргә тура киләсәк.

Быуалар һәм һыу ятҡылыҡтары майҙанының үҫеүе ҡоролоҡҡа ҡаршы көрәштә мөһим әһәмиәткә эйә булып тора. Шуға күрә район етәкселәре был эшкә контроль яһауҙы көсәйтергә һәм колхоз етәкселәренән уға бөтә серьезлылыҡ менән ҡарауҙы талап итергә бурыслылар.

Ф. Даниленко,

«Мелиоводстройҙың» Башҡортостан контораһы баш инженеры.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Рус драма театрында — «КӨНБАЙЫШТАҒЫ СПК».
«Октябрҙә» — «ҠЫШЫУ КЕШЕЛӘР». «ЯНИКА».
«Сәләүәттә» — «ДҮРТЕНСЕ [...] КОП».
«Уралда» — «КАТАЛИНА [...] ХЕТЕ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлешө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02448 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тираж [...]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Кыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл № 79 (8796) 22 апрель йәкшәмбе

Хаҡы 20 тин

Бөгөнгө номерҙә:

БАҪЫУ ЭШТӘРЕНЕҢ ЮҒАРЫ СИФАТЫ ӨСӨН. Х. Ғәлимов. — Саҡмағошта яҙғы баҫыу эштәренең темпы һәм сифаты түбән (1-се бит).

Ә. Мәнсүтов. — Трактористәр көндәлек нормаһы арттырып үтәйҙәр. (1-се бит).

Ленин тыуған һәм үҫкән ерҙә (1-се бит).

ПРОПАГАНДИСТӘРГӘ ҺӘМ МАРКСИСТИК-ЛЕНИНСЕ ТЕОРИЯНЫ ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘРГӘ ЯРҘАМҒА. Ғ. Ғүмәров. — И. В. Сталиндең «Тағы ла бер тапҡыр беҙҙең партиябыҙҙағы социал-демократик тайпылыш тураһында» тигән хеҙмәте тураһында (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ю. Әхмәдиев. — Нефть өсөн көрәште көсәйтергә (2-се бит).

Ш. Дусҡаев. — Партия мәғарифе эшенә көндәлек иғтибар (2-се бит).

ТЕАТР. Кирәй Мәргән. — «Яҙғы йыр» (3-сө бит).

ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ. Сәғит Агиш. — М. Ғафуриҙең бөгөнгө тауышы (3-сө бит).

Мансур Сендсилә. — Фабрика ҡыҙҙары (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. С. Уисо. — Ҡонбағыштың силос өсөн иҫкәтә ҡушып сәсеү (4-се бит).

А. Хәрисов. — Государство сауҙаһы работниктарының кәңәшмәһе (4-се бит).

ДҮРТ ДЕРЖАВА СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРҘАРЫ УРЫНБАҪАРҘАРЫНЫҢ ӘҘЕРЛЕК КӘҢӘШМӘҺЕ (4-се бит).

Бөтә тракторҙарҙың да ике сменала тулы ҡеүәтендә эшләүенә өлгәшергә

Республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында баҫыу эштәре көндән-көн киң йәйелә бара. 1946—1950 йылдарға СССР-ҙың дүртенсе биш йыллыҡ планының үтәлеше йомғаҡтары тураһында СССР Государство план комитеты һәм Үҙәк Статистика Управлениеһының белдереүе колхоз ауылында бынаса күрелмәгән хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Башҡортостан колхозсылары, механизаторҙары, ауыл хужалығы специалистары, бөтә хеҙмәтсәндәре көсөк үк белдереүҙе ҙур шатлыҡ һәм ғорурлыҡ менән ҡаршыланылар. Улар Тыуған илебеҙҙең экономик һәм политик ҡөҙрәтен артабан нығытыу, ауыл хужалығы продукттарының муллығын тәьмин итеү өсөн тағы ла яҡшыраҡ эшләргә, сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срогтарҙа юғары сифатлы итеп үткәреүгә һүҙ бирәләр.

Быйыл һуңғы биш йыллыҡта республикабыҙҙың МТС һәм ЛЭС-тары, колхоздары күп һанда ҡеүәтле яңы тракторҙар, комбайндар һәм башҡа машиналар менән байытылдылар. Был тракторҙар большевиктар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндың социалистик ауыл хужалығын күтәреү тураһында өҙлөкһөҙ ҡайғыртыуҙарының күреүҙәренең гүзәл кәүҙәләнеше булып тора.

Һәр партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының бурысы ауыл хужалығының бай техникаһы һәм резервтарын тулыһынса файҙаланыуҙан, машина-трактор паркының эшен яҡшыртыуҙан тора. Һиҙҙәлә булғанынса, МТС-тар баҫыу эштәрен үткәреүҙә хәл иткес роль уйнайҙар. Һәр бер МТС-тың, трактор бригадаһының һәм һәр бер трактористың, прицепщиктың яҙғы баҫыу эштәре буйынса үҙ бурыстарын намыҫ менән үтәп сығыуы — тотош республикала юғары уңыш алыуға нығыны нигеҙ һалыу тигән һүҙ ул. Алдынғы трактор бригадалары һәм трактористәр быйыл яҡшы эшләйҙәр һәм социалистик ярышта алдынғы урындарын намыҫ менән үтәү өсөн көрәшәләр. Ново-Троицк МТС-ының «...» колхозын хеҙмәтләндереүсе иптәш Вахитов етәкселек иткән бригада трактористтәре смена нормаларын системалы арттырып үтәйҙәр. Бригада ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 700 гектарҙан артыҡ майҙанда ер тырматты. 400 гектар майҙанда культивация үткәрҙе һәм 100 гектарҙан артыҡ майҙанда ашлыҡ сәсте. Трактористәр иртә культураларҙы сәсеүҙе ошо ике-өс көн эсендә тамамлау һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген көндән-көн күтәрә баралар.

Иҙрисовтың МТС-ында трактор бригадаһы бригадиры иптәш Салтыков, Бубаев ...ҡлы механизаторы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең патриотик башланғысына ҡушылып, бөтә тракторҙары социалистик һаҡлыҡҡа алырға, йыл сезонда һәр бер шартлы трактор исәбенә 700 гектар ер эшкәртергә, 15 тонна яғыулыҡҡа экономия яһарға, үҙе хеҙмәтләндергән Максим Горький исемендәге колхозда бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 15-әр центнер урожай алыуға һүҙ бирҙеләр. Улар был йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәйҙәр. «С—80» тракторында эшләүсе тракторист иптәш Проншин сәғәт графигы буйынса эшләп, сменаға 28-әр гектар ер һөрә. Бригаданың башҡа трактористтәре лә смена нормаларын арттырып үтәйҙәр.

Ләкин баҫыу эштәренең барышы машина-трактор станцияларының эшендә ҙур етешһеҙлектәрҙең булыуы тураһында һөйләй. Берәүһенән, тракторҙарҙың бик һуңлап эшкә башлауҙарын айырып күрергә кәрәк. Күп кенә МТС-тарҙа бынан ... алда ук ҙур мәсьәләләрҙе баҫыу эштәре башлауға тулы мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан «ер өшөй, яғыулыҡ артыҡ тотола» тигән һылтау менән тракторҙарҙы эшкә ҡушмай, иң яҡшы сроктарҙы ҡулдарынан ысҡындырҙылар. Хәҙер яҙғы сәсеүҙә юғалтылған һәр бер көн һәм сәғәт урожайҙы түбәнәйтеүгә килтерәсәген аңларға теләмәйҙәр.

Сәсәй МТС-ында ошо көнгә тиклем машиналарҙың яртыһынан күбеһе эшкә ҡушылмаған. Куйбышев исемендәге колхозға ебәрелгән «С—80» тракторы юлда уҡ ватыла һәм ул 7-се көндә генә колхозға килеп етә һәм 4 сәғәт эшләү менән үк тағы ватыла. Ҡалған 5 трактор ҙа шулай уҡ бик насар файҙаланыла. Трактористәр смена нормаларын арттырып ғына үтәйҙәр. 6 трактор менән бер аҙна эсендә иң бары 60 гектар ғына ер һөрөлгән. «Яңы тормош», «Төйәләҫ», Ворошилов һәм Сталин исемендәге колхоздарҙа ла тракторҙар шулай уҡ бик насар эшләйҙәр. Төнгө сменалар ойошторолмаған. МТС директоры Витушкин һәм өлкән механик Исхаков иптәштәр был эшкә үҙҙәрендә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр, трафикҡа бөтөнләй һанға һуҡмайҙар һәм уның үтәлешенә ныҡлы контроль алып бармайҙар.

Подлуб, Ишле, Рәжәп, Стәрлетамаҡ һәм Михайловка МТС-тарында ла тракторҙар паркын файҙаланыуҙа серьез етешһеҙлектәр булыуы тураһында сигналдар бар. Мәҫәлән, Подлуб МТС-ының Ленин исемендәге колхозға ебәрелгән «СТЗ — НАТИ» тракторы колхозға барған ваҡытта уҡ ватылып, МТС усадьбаһына кире ҡайтарылды. Бына хәҙер биш енсе көн инде тракторист иптәш Бодров үҙенең тракторының ремонтланыуын көтөп мастерскойҙа ултыра. Был МТС-тарҙың етәкселәре тракторҙарҙың ике сменала эшләүҙәрен баһаламайҙар, механизаторҙарға эште сәғәт графигы буйынса ойоштороуға ярҙам итмәйҙәр, простойҙарға ҡаршы көрәш алып бармайҙар.

Яҙғы сәсеү осоронда һәр көн һәм һәр бер сәғәт ҡиммәт. Хәҙер бөтә баҫыу эштәрен дә бер үк ваҡытта алып барырға тура килә. Тупраҡта дым туплап ҡалыу өсөн тунға һөрөлгән ерҙәрҙе тиҙерәк тырматырға һәм бер үк ваҡытта әҙерләнгән тупраҡҡа сәсергә лә кәрәк. Бына был МТС һәм колхоз етәкселәренән эште дөрөҫ ойоштороуҙы һәм эште оҫта ойоштора белеүҙе талап итә. Баҫыу эштәрендәге артта ҡалыуҙы бөтөрөү, сәсеү графигын биш көндән-биш көнгә үтәп барыу өсөн беренсе нәүбәттә тракторҙар паркын файҙаланыу яҡшыртылырға, һәр бер машина ике сменала эшләтелергә тейеш. Трактористәр составының, прицепщиктарҙың һәм хеҙмәтләндереүсе башҡа кешеләрҙең даими булыуына, тракторҙарҙың яғыулыҡ, һыу, орлоҡ менән өҙлөкһөҙ тәьмин ителеп тороуына өлгәшергә кәрәк.

Һәр бер трактористың смена нормаһын үтәүенә һәм арттырып үтәүенә өлгәшеү МТС етәкселәренең һәм партия, комсомол ойошмаларының маҡтаулы бурысы. Ә быға механизаторҙар араһында социалистик ярышты киң йәйелдергәндә һәм агитацион-массовый эште көсәйткәндә генә өлгәшергә мөмкин.

Баҫыу эштәренең темпын күтәреү менән бер үк ваҡытта уның сифатына, агротехник талаптарҙың тулыһынса үтәлеүенә серьез иғтибар бирергә кәрәк. Брак яһаусыларға — ерҙе предплужниксыҙ һабандар менән һөрөүселәргә, һай һәм сей ҡалдырып һөрөүселәргә, эшкәртелмәгән ерҙә сәсеүгә юл ҡуйыусыларға йәки сәсеү нормаһын түбәнәйтеүселәргә ҡаршы бөтә общественностең фекере туплаңырға, уларға үҙ ваҡытында сара күрелергә тейеш.

ВКП(б) райкомдары һәм район Советы исполкомдары МТС-тарҙағы машина-трактор паркының файҙаланылыуына контролде көсәйтергә, һәр бер трактор бригадаһының эше менән яҡындан танышырға, уларҙың эштәрендә көндәлек ярҙам күрһәтергә бурыслылар.

Тыуған илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре ҙур күтәренкелек менән Беренсе Май байрамына әҙерләнәләр. Был данлыҡлы датаға яҙғы баҫыу эштәрен тулыһынса тамамлау менән килеү — механизаторҙарҙың байрамға иң ҙур бүләктәре ул.

Баҫыу эштәренең юғары сифаты өсөн



Әбйәлил районы «Красная Башкирия» совхозы эшселәре Май алды социалистик ярышына ҡушылып, иртә культуралар сәсеүҙе агротехник срогтарҙа тамамлау өсөн көрәшәләр. Совхоздың Самарск бүлексәһендә иптәш Сафа Истамғәлин агрегаты сәсеүҙә айырыуса яҡшы эшләй. Ул көндәлек нормаһы 130 процентҡа үтәй.

Һүрәттә: агрегат бойҙай сәсә, уңда — тракторист иптәш С. Истамғәлин.

М. Әхмәтйәнов фотоһы.

Саҡмағошта яҙғы баҫыу эштәренең темпы һәм сифаты түбән

Иптәш Ихсанов етәкселек иткән өсөнсө номерлы трактор бригадаһы Сталин исемендәге колхозға килде. Беҙ бригадирҙы ер башында һүтелеп ташланған НАТИ тракторы эргәһендә бөрсөлөп йөрөгән ваҡытында осраттыҡ. Бригаданың хәле тураһында һорашып башлағас иптәш Ихсанов зарлана башланы:

— Быйыл эштәр уңайға бармай әле,— МТС етәкселәре беҙҙе бик уңайһыҙ хәлгә ҡалдырҙылар, колхозға килтергә ҡуштылар, ә беҙ әҙер түгел инек. Тракторҙарҙың коленчатый валы алыштырылмаған. Шуның өсөн дә хәҙер бураҙнала ремонтларға тура килә.

Был трактор дүртенсе тәүлек инде «ремонтлана». Ләкин уның ҡасан эшкә башлаясағын МТС механигы Нуриәлиев тә, бригадир үҙе лә әйтә алмай. Был бригаданың башҡа тракторҙары ла ныҡлап эшкә башламағандар әле. Ошо уҡ бригаданың «ДТ — 54» маркалы тракторы ла көндәҙге сәғәт 2-лә генә тырматыуға башланы.

— Үткән көн 40 гектар самаһы ер тырматҡан инек, ләкин яғыулыҡ күп расходлана. Бер иң тиклем ерҙең кибеүен көттөк, — тип аңлата бригадир. Ысынбарлыҡта был бригада эшләгән участка ҡалҡыулыҡта. Үткән көҙ тунға һөрөп ҡалдырылған ер күптән инде кибеп бөткән.

Был колхозды ошо уҡ Рәжәп МТС-ының иптәш Мөхәмәтгәлиев бригадаһы ла хеҙмәтләндерә. Дөрөҫ, был бригаданың 3 тракторы ла эшләй, ләкин уларҙың береһе лә смена нормаларын үтәмәйҙәр. Бында «С — 80» тракторы иртәнге сәғәт унда ғына эшкә башланы. Ул 10 корпуслы һабан менән үткән йыл көнбағыш сәселгән ер участкаһын һөрә. Колхоз етәкселәренең (председателе иптәш Нәжмиев) был участкаларҙы ваҡытында көнбағыш һабаҡтарын таҙартыуҙы ойоштормауы арҡаһында трактор йыш ҡына туҡтап тора. Тракторист Сәлимов та һәм прицепщиктар ҙа ерҙең тәрән һөрөлөүенә әһәмиәт бирмәйҙәр. 15 гектар ер 15-16 сантиметр тәрәнлектә генә һөрөлгән. Бындай хәлдәрҙе башҡа бригадаларҙа ла осратып була.

Бына Ленин исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән Нәжмиев етәкселек иткән трактор бригадаһы. Был бригаданың тракторисы Вәлиуллин «СТЗ-НАТИ» тракторы менән үҙ сменаһында 8 сәғәт ваҡыт эсендә 48 килограмм яғыулыҡты артыҡ тотоноп, трактор 15 пар урынына 8 пар тырма тағып ҡына эшләй.

Рәжәп МТС-ының етәкселәре (директоры Ардаширов, уның политик эштәр буйынса урынбаҫары Ғилемханов) бай техниканы, резервтарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн конкрет саралар күрмәйҙәр. Күпселек тракторҙар насар ремонтланыу сәбәпле эшкә башлауҙың тәүге көндәрендә үк ватылып, бураҙнала ултыралар. Смена нормалары үтәлмәй. Бында төнгө сменаларҙы ойоштороуға бөтөнләй иғтибар бирмәйҙәр.

Ә колхоз етәкселәре баҫыу эштәрен тракторҙар менән генә башҡарыуға иҫәп тотоп, йәнле тартыу көстәрен әлә булһа эшкә ҡушҡандары юҡ.

Сталин исемендәге колхоз аттар менән 200 гектар майҙанда ужым һәм 168 гектар майҙанда тунға һөрөлгән ерҙәрҙе тырматырға, 115 гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ, 90 гектар майҙанда техник культуралар сәсергә тейеш. Ләкин бында 50-гә яҡын эш атынан иң бары икә генә ат ер тырматыуҙа эшләй.

Тырмасылар, һабансылар араһында хеҙмәт насар ойошторолған. Уларға айырым участкалар бүлеп бирелмәгән. Шуға күрә кемдең күпме һәм нисек эшләүен белеп булмай. Һәр көндә башҡарылған эш баҫыусылыҡ бригадаһы бригадирҙары тарафынан ҡабул итеп алынмай. Колхозсылар эшкә бик һуң сығалар һәм иртә ҡайталар.

«Герой» колхозында ла резервтар бик насар файҙаланыла. Был колхозда йәнле тартыу көстәре менән 775 гектар ер тырматылырға, 100 гектар культивация үткәрелергә, 200 гектарҙан артыҡ майҙанда ашлыҡ сәселергә тейеш. Был эште иң яҡшы агротехник срогтарҙа үтәп сығыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Ләкин колхоз председателе иптәш Нәсиров бөтә эште трактор бригадаларының көсө менән башҡарыуға иҫәп тота. Ә 70 баштан артыҡ һимеҙ аттар яланда уйнаҡлап йөрөйҙәр. Иптәш Нәсиров:

— МТС договорҙан тыш эшләмәһә,— беҙгә яҙғы баҫыу эштәрен үҙҙәрыу ауырға төшәсәк, — тип МТС менән өҫтәмә договор төҙөү тураһында юллап йөрөй.

Райондың партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарынан бында был етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бөтөрөү, баҫыу эштәренең темпын һәм сифатын күтәреү өсөн конкрет саралар күреү талап ителә.

Х. Ғәлимов.

Трактористәр көндәлек норманы арттырып үтәйҙәр

Юлдыбай. (Телефон аша). Матрай районы игенселәре һәм механизаторҙары, Май алды социалистик ярышына ҡушылып, баҫыу эштәрен киң йәйелдерҙеләр. Колхоздар дым ҡаплау эшен агротехник срогтарҙа тамамланылар.

Матрай һәм Һары ҡул МТС-тарының бөтә тракторҙары баҫыуҙарҙа эшләйҙәр.

Һары ҡул МТС-ы (директоры иптәш Усманов) механизаторҙары баҫыу эштәрендә өлгө күрһәтәләр. Иптәш Попов етәкселек иткән трактор бригадаһы Молотов исемендәге эрелателгән колхозда ике көндә 1100 гектар ер тырматты. Трактористәрҙән Захаров һәм Сударчиков иптәштәр көндәлек нормаһы 125 — 150 процентҡа үтәйҙәр. Колхозда тракторҙар менән 100 гектар ер һөрөлдө.

Ә. Мәнсүтов.

Сәғәт графигы менән эшләйҙәр

Йомағужа районы Хоҙайбирҙин МТС-ының иптәш Салтыков етәкселек иткән трактор бригадаһы члендәре һәр бер шартлы тракторға 700 гектар ер эшкәртергә, сезонға 15 тонна яғыулыҡҡа экономия яһарға һәм үҙҙәре хеҙмәтләндергән Максим Горький исемендәге колхозда бөртөклө ашлыҡ культураларынан 15-әр центнер урожай үҫтереп алырға йөкләмә алып, социалистик ярышҡа сыҡҡайнылар.

Бригада бер нисә көн эсендә генә 1140 гектар майҙанда ер тырматты, 52 гектар майҙанда культивация үткәрҙе. «С — 80» тракторында эшләүсе иптәш Проншкин тәүге көндә уҡ сәғәт графигы менән эшләп, сменаға 23.6 гектар урынына 28 гектар ер һөрҙө. Ул һәр бер сәғәткә нормаһы арттырып үтәне.

Был бригаданың члендәре Бочкарев, Сараков һәм башҡа иптәштәр смена нормаларын арттырып үтәйҙәр.

Ә. Исаҡаев.

Республикабыҙҙың совхоздарында

Республиканың малсылыҡ совхоздары яҙғы баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта һәм яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн көрәшәләр. Һәүәнәк, Зианчура һәм Байрамғол совхоздары тунға һөрөлгән ерҙәрҙе тырмалап бөттөләр. Арслан, Зианчура, Мияҡа һәм Таналыҡ совхоздарында 1179 гектар ер һөрөлдө, Арслан совхозында 233 гектар майҙанда иртә культуралар сәселде.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу эштәре лә уңышлы алып барыла. Инәк совхозы имән сәтләүектәрен ойлап ултыртыу планын үтәне. Был эш Арслан совхозында 9 һәм Дим совхозында 7 гектар майҙанда үткәрелде. М. Горький исемендәге совхозда 3 гектар майҙандағы элекке урман полосаһында өҫтәмә рәүештә яңы ағастар ултыртылды.

Б. Кочетков.

Ленин тыуған һәм үҫкән ерҙә

Ульяновск ҡалаһына килеп етеү менән үк онотолмаҫ һәм бөйөк Лениндең тыуған ҡалаһы күҙ алдына килә. Тап бына ошо ҡалала, ул әле Симбирск тип аталған саҡта, 1870 йылда тарихта иң бөйөк кешеләрҙән береһе, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренә быуаттар буйына килгән иҙелеүҙән ҡотолоу юлын күрһәтеүсе, бөйөк юлбашсы, большевиктар партияһын һәм Совет государствоһын ойоштороусы Ленин тыуған.

Был ҡалала бөтәһе лә бөйөк Ленинде хәтерләтә. Был ҡалаға, ҡаладағы музейға иҫһеҙ-сикһеҙ ҙур илебеҙҙең бөтә мөйөштәренән кешеләр киләләр һәм килеү менән үк тиҙерәк Ленин үҫкән йортто — Ленин урамындағы Ленин музейын күрергә ашығалар. Уларҙың күптәре меңдәрсә километрҙарҙан бары тик ошо күпелгә яҡын, ҡиммәтле, тарихи йортто күреү өсөн генә киләләр...

Ҡаланың Совет урамында Владимир Ильич Ульянов уҡыған гимназия бинаһы ла бар. Бында хәҙер Ленин исемендәге мәктәп. Яңы Венецта, хәҙер Ленин исемендәге майҙанда, киң йәйелеп ятҡан Волга үҫ төбөндәгеләй күренеп торған урында, донъялағы иң ҙур һәйкәлдәрҙән береһе булған Ленин һәйкәле тора. Унан алыҫ түгел Ленин исемендәге бик ҙур библиотека. Ул элек атаҡлы Карамзин библиотекаһы булған. Владимир Ильич был библиотеканың иң актив уҡыусыларынан береһе булған.

Былар бөтәһе лә ҡиммәтлеләр, яҡындар. Ләкин Ульяновск ҡалаһындағы ҡиммәтлеләрҙең иң ҡиммәтлеһе — ул Ленин урамындағы Ленин йорто — музейе. Был йортта Ленин 1878 йылдан алып 1887 йылға тиклем торған. Был йортта 8 йәштән 17 йәшкә тиклем торған Владимир Ильичтең уҡыусы бала ваҡыты бигерәк тә ныҡ тәьҫир ҡалдыра. Уның сиктән тыш зирәк, булдыҡлы, тырыш булғанлығы һәр урында асыҡ күренеп тора.

— Владимир Ильичтең уҡыған саҡта предметтары төрлө-төрлө булһа ла, отметкаһы бер генә — бары 5 һәм 5 булған тип аңлата лектор-экскурсовод иптәш Важанова.

Беҙ «Гостиная» тигән залға инәбеҙ. Унда бер рояль тора. Уны Владимир Ильичтең әсәһе Мария Александровна уйнаған. Ул музыка яратҡан, үҙе юғары культуралы, аҡыллы кеше, балалар тәрбиәләүҙә лә өлгөлө әсә булған. Ул саҡтағы алдынғы фекер кешеләренең әҫәрҙәрен уҡыған.

Владимир Ильичтең атаһы Илья Николаевич, халыҡ уҡытыусыһы һәм инспектор булғаны хәлдә, үҙ заманындағы прогрессив идеяларҙы үҙләштергән. Уның өҫтәлендә әле лә, рустың алдынғы общественный деятелдәре, революцион-демократтар Белинский, Чернышевский, Некрасовтар тарафынан сығарылған «Современник», «Отечественные записки» журналдары ята.

Икенсе бер шүрлектә Маркстың гениаль хеҙмәте «Капитал» ята. Петербургта, батшаны үлтерергә әҙерләнеүҙә ғәйепләнеп, Александр Ульянов үлем язаһына хөкөм ителгәс, был сиктән тыш ауыр хәбәр ошо йортҡа килеп инә һәм Владимир Ильичте тәрән уйға сумдыра. Унан:

— Юҡ, беҙ бындай юл менән бармаябыҙ. Бындай юл менән барырға ярамай, — ти Ленин.

Ленин Ҡазанға университетҡа уҡырға киткәс, 1887 йылда Ульяновтар семьяһы был йорттан Ҡазанға күсәләр.

Совет хөкүмәте, большевиктар партияһы 1929 йылда, элекке Мосҡау урамы, хәҙерге Ленин урамындағы был йортто— Ленин музейе-йорто итеү тураһында ҡарар сығара.

Бына 22 йылдан бирле был йорт күп меңдәрсә кешеләрҙең мөхәббәтен үҙенә тартҡан изге урын булып хеҙмәт итә. Бында хәҙер бөтәһе миллиондан артыҡ кеше булған. Бында эшселәрҙе лә, колхозсыларҙы ла, ғалимдарҙы ла, студенттарҙы ла, һалдаттарҙы ла, офицерҙарҙы ла күрәһең.

Килгән бер кеше Ульяновтар торған өйҙәң буҫағаһынан атлағанда тәрән тулҡынланыу, уларға иҫһеҙ-сикһеҙ бирелгәнлек тоя. Ул кеше бүлмәләрҙең береһе артынан икенсеһен ҡарап йөрөгәндә Ленин тормошона бәйле булған һәр бер нәмәне ентекләп өйрәнә.

Өйҙәң икенсе ҡатында башҡа бүлмәләр менән бер рәттән Владимир Ильич бүлмәһе. Был йыйнаҡ ҡына ябай бүлмәлә тимер карауат, кескәй өҫтәл, урындыҡ, китаптар теҙелеп ятҡан ике шүрлек, стенала донъя картаһы элгән. Бына «Жизнь европейских народов» исемле китап. Был китап Сембер гимназияһы педагогия Советы тарафынан 4-се класс уҡыусыһы Владимир Ульяновҡа яҡшы уҡыған өсөн бүләк итеп бирелгән. Китап менән бергә уға «Маҡтау ҡағыҙы» ла биргәндәр. 1887 йылда гимназияны яҡшы тамамлағаны өсөн Ленинга бирелгән алтын миҙалдең копияһы шунда тора.

Был музейға килеүселәр Ленин күрһәткән юл менән барыу, илебеҙҙә коммунизм төҙөү өсөн хеҙмәт батырлыҡтарына рухани азыҡ алалар. Улар үҙҙәренең тәьҫирҙәрен бында махсус журнал—томға яҙып ҡалдыралар. Был яҙмалар хәҙер 12 томға еткән. Был металлургтарҙың, нефтселәрҙең, шахтерҙарҙың, туҡыусыларҙың, колхозсыларҙың, һалдаттарҙың, офицерҙарҙың, ғалимдарҙың һәм физик хеҙмәт кешеләренең бөйөк Ленинга үҙҙәренең иҫһеҙ-сикһеҙ мөхәббәт һәм хөрмәт тойғоһо сағылдырған яҙма.

Шулай меңдәрсә совет кешеләре бында бөйөк даһиҙың йәш ваҡытындағы тормошо менән танышып, уның идеяларын тормошҡа ашырыуға рухланалар.

Документаль „Совет Башҡортостаны" кинофильмен сығарыуҙа ҡатнашыусыларҙы Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының почет грамоталары менән наградлау тураһында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы

УКАЗЫ

Документаль «Совет Башҡортостаны» кинофильмен сығарыуҙа ҡатнашыусыларҙы Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының почет грамотаһы менән наградларға:

1. Әхмәтов Хәсән Фәйзулла улын — композитор.
2. Бикчәнтәев Әнүәр Һади улын — сценарист.
3. Вальтер Лев Ильичте — звукооператор.
4. Дмитриев Иван Ивановичте — звукооператор.
5. Мортазин Рәүф Әхмәт улын — композитор.
6. Назаров Анатолий Михайловичте — баш оператор.
7. Самознаева Тамара Ивановнаны — кинофильм директоры.
8. Соболь Константин Викторовичте— оператор.
9. Соловьев Николай Владимировичте — режиссер.
10. Шапиро Иосиф Соломоновичте — режиссер.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретары вазифаһын үтәүсе И. ИӘРКӘЕВ.

21 апрель, 1951 йыл.

Пропагандистарға һәм марксистик-ленинсе теорияны өйрәнеүселәргә ярҙамға

И. В. СТАЛИНДЕҢ „ТАҒЫ ЛА БЕР ТАПҠЫР БЕҘҘЕҢ ПАРТИЯБЫҘҘАҒЫ СОЦИАЛ-ДЕМОКРАТИК ТАЙПЫЛЫШ ТУРАҺЫНДА“ ТИГӘН ХЕҘМӘТЕ ТУРАҺЫНДА

Иптәш Сталиндең «Тағы ла бер тапҡыр беҙҙең партиябыҙҙағы социал-демократик тайпылыш тураһында» тигән хеҙмәте марксизм-ленинизм хазинаһына бик ҙур вклад булып тора. Ул иптәш Сталиндең «Октябрь революцияһы һәм рус коммунистарының тактикаһы», «Ленинизм нигеҙҙәре тураһында», «Ленинизм мәсьәләләренә ҡарата» тигән хеҙмәттәре менән бер рәттән тора. Был әҫәрҙә күтәрелгән гениаль идеялар общественың коммунизмға табан хәрәкәтенең бөтә барышына ҡеүәтле йоғонто яһанылар һәм әле лә яһайҙар. Иптәш Сталиндең аҡыллы алдан билдәләүҙәре беҙҙең илебеҙҙә социализмдең еңеүендә, Европаның күп кенә илдәрендә һәм Ҡытайҙа халҡ демократияһы режименең урынлаштырылыуында, башында СССР торған халҡ-ара демократия лагеренең өҫтөнлөктәрендә үҙҙәренең бөйөк кәүҙәләнештәрен таптылар.

* * *

1926 йылдың декабрендә Коминтерн Исполкомының киңәйтелгән VII пленумында иптәш Сталин «Тағы ла бер тапҡыр беҙҙең партиябыҙҙағы социал-демократик тайпылыш тураһында» доклад менән сығыш яһаны. Советтар Союзының тарихендә был һынылыш осоро ил эсендә лә һәм шулай уҡ халҡ-ара аренала ла синфи көрәштең киҫкенләшеүенә бәйләнгән ҡыйынлыҡтар тулы булған осор ине. Капиталистик илдәрҙә революция ваҡытлыса сигенә башлағайны, халҡ-ара революцион хәрәкәттең үҫеш темпы түбәнәйгәйне. Капиталистик илдәр ваҡытлыса бер ни тиклем стабилизация стадияһына инделәр. Ләкин был яңы кризисте, эске ҡаршылыҡтарҙың яңы ҡырҡыулашыуын вәғәҙә итә ине.

Бер үк ваҡытта Советтар Союзы ла стабилизацияланды. Ләкин уның характеры бөтөнләй башҡа төрлө булды. Ул социализм иле ҡеүәтенең артабан үҫеүен аңлатты. Ике стабилизацияның төп айырмаһы бына шунда ине.

[illegible]

листик һәм граждандар һуғышы тарафынан емерелгән халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙан илде социалистик индустрияләштереү политикаһына күсте. Был — төрлө оппозицион ағымдарҙы бер блокҡа берләшеүгә этәрҙе.

Өсөнсөнән, ленинизмдең дошмандары, партияға ҡаршы төркөү сығыш яһауҙың тулыһынса өмөтһеҙ эш булыуын аңлап, ҡеүәтле һәм тупланған Ленин — Сталин партияһына ҡаршы көрәштә үҙҙәренең көсһеҙлектәрен берләшеү юлы менән бер ни тиклем еңеләйтергә теләнеләр.

Троцкисе-зиновьевсе банда үҙенең ҡабаһәт ниәттәрен «һул», «революцион» фразалар менән маскировать итергә мәжбүр булды. «Был СССР пролетариатының революционлығы, беҙҙең пролетариатыбыҙҙа тупланған ғәйәт ҙур революцион традициялар менән аңлатыла, — тине иптәш Сталин. — Был революцияға ҡаршы оппортунистик элементтарға ҡарата СССР эшселәренең туранан-тура нәфрәте менән аңлатыла. Был шуның менән аңлатыла: беҙҙең эшселәребеҙ асыҡтан-асыҡ оппортунисте просто тыңламаясаҡтар, шуңлыҡтан «революцион» маскировка тышҡы яҡтан ғына булһа ла эшселәрҙең иғтибарын йәлеп итергә һәм уларҙа оппозицияға ышаныс тыуҙырырға тейешле алдатҡыс (приманка) булып тора» (И. Сталин. Әҫәрҙәр, 9 том, 18-се бит).

Берләшкән оппозицияның башында троцкисселар торҙо. Был троцкизмдең «...беҙҙең партиябыҙҙа йәшәп килгән бөтә оппозициялар араһында оппортунизмдең айырыуса тамамланған ағымы» (шунда уҡ, 14-се бит) булыуы менән аңлатыла. Бынан тыш, ике йөҙлөлөгө, «һул фразаларға» йәшеренеүгә һәләтлеге, партияға ҡаршы блоктар ойоштороуҙа тәжрибәгә бай булыуы менән троцкизм партияға ҡаршы бөтә ағымдарҙан өҫтөн тора ине.

Партияға ҡаршы булған был блок бер илдә социализм төҙөү мөмкинлеге тураһындағы ленинсе-сталинсе учениене ин- [illegible]

ҙан ныҡыуҙарының ҡеүәтле сығанағы, эшселәр синыфының берҙәмлеге, бөтә демократик революцион көстәрҙе туплау, тыныслыҡ, демократия һәм социализм өсөн көрәштәрендә ышаныслы компас булып тора.

Сит илдәрҙәге коммунистик партиялар, [illegible]

бит).

Был сталинсе положение ижади марксизмдең һәм фәнни социализмдә нигеҙләүселәрҙең учениеһен общественный үҫештең яңы шарттарында артабан байыҡтырыуҙың өлгөһө булып тора.

Троцкисе-зиновьевсе оппозиция, социализмдең башта бер илдә еңеүе мөмкинлеге тураһындағы учениегә ҡаршы көрәшеүендә, Маркс менән Энгельс социализмдең бер илдә еңеүе мөмкин түгел, тип иҫәпләнеләр, тип күрһәтеп, партия массаларын буталдырырға маташтылар. Иптәш Сталин оппозицияның был маневрын фаш итте һәм уның иҫке формулаларға йәбешеп ятыуы марксистик теорияға уның социал-демократик мөнәсәбәтен булыуын ғына күрһәтә, тип билдәләне. Социалистик революцияның бер үк ваҡытта бөтә цивилизациялы илдәрҙә еңеүе тураһында Маркс менән Энгельс тарафынан бирелгән формула **империализмға тиклемге** капитализмға ҡағыла, был формула иҫкерҙе һәм уны яңы формула менән алыштырырға кәрәк, сөнки общественный үҫеш шарттары үҙгәрҙе, тип күрһәтте иптәш Сталин.

Иптәш Сталин капиталистик ҡамалыу шарттарында СССР-ҙа тулы социалистик общество төҙөү мөмкинлеге тураһындағы һорауға аныҡ яуап бирҙе. Иптәш Сталин, халҡ-ара пролетариат армияһы вәкилдәренә был проблеманың бөтә яҡтарын, уны хәл иткәндә килеп тыуған синфи көрәштең бөтә мәсьәләләрен һөйләп биреп, шундай һығымтаға яһаны: «Тимәк, беҙҙең илебеҙҙә социализмдең еңеүе мөмкин, социализмдең экономик базаһын төҙөп еткереү мөмкинлеген тәьмин ителгән тип иҫәпләргә була» (24-се бит).

«Тағы ла бер тапҡыр беҙҙең партиябыҙҙағы социал-демократик тайпылыш тураһында» тигән докладта Советтар Союзында социализм төҙөүҙең төп факторҙары аныҡ һәм аңлайышлы рәүештә күрһәтеп бирелде. «...Пролетариат власе, пролетариат власе ҡулындағы эре производство, пролетариат менән крәҫтиәндәрҙең союзы, был союзда пролетариаттың етәкселеге, кооперация», бына

ошондай факторҙар ине. Беҙҙең партиябыҙ, тип күрһәтте иптәш Сталин, бер илдә социализмдең еңеүе мөмкинлеге тураһындағы учениеғә таянып, социалистик обществоны эҙмә-эҙлекле рәүештә төҙөй. ВКП(б)-ның XIV съезы тарафынан билдәләнгән, илде индустриялаштырыу [illegible]

уның еңеүенә ышанысты нығытты, боевой революцион-марксистик армияларҙы сыныҡтырыуҙа күренекле роль уйнаны.

Яңы типтағы партия булған большевиктар партияһы фекер айырымлыҡтарын көрәш юлы менән еңеп сыҡты, оппортунистарҙан үҙенең сафын таҙартты. Троцкисе-зиновьевсе группа тамам тар-мар ителде. Һуңынан беленгәнсә, унда ҡатнашыусылар империалистик государстволарҙың төп агенттәре булғандар. Троцкисе-зиновьевсе блокты ваҡытында тар-мар итеү СССР-ҙа социализмды төҙөп еткереүҙә, сит илдәрҙәге коммунистик партияларҙы туплауҙа һәм марксистик-ленинсе тәрбиәләүҙә ғәйәт ҙур роль уйнаны.

* * *

«Тағы ла бер тапҡыр беҙҙең партиябыҙҙағы социал-демократик тайпылыш тураһында» тигән хеҙмәте менән иптәш Сталин Ленин идеяларын дошмандар һөжүменән һаҡлап алып ҡалды. Шуның һөҙөмтәһендә бөтә илдәр пролетариаты сафында ленинизм тантана итте.

СССР-ҙа социализмдең еңеүенә, бөтәһенән дә элек, бер илдә социализмдең еңеүе мөмкинлеге тураһындағы ленинсе идеяны иптәш Сталиндең һаҡлап алып ҡалыуы һәм үҫтереүе арҡаһында өлгәшелде. Сталинсе биш йыллыҡтар йылдарында Совет иле алға табан һикереш яһаны, артта ҡалған аграр илдән ҡеүәтле социалистик державаға әүерелде.

Партияның XVIII съезында һөйләгән докладында иптәш Сталин марксистик-ленинсе теорияны яңы баҫҡысҡа күтәрҙе, бер илдә, йәғни СССР-ҙа коммунизмдең юғары фазаһын төҙөү мөмкинлеге тураһындағы положениене формулировать итте. Иптәш Сталин етәкселегендә беҙҙең илебеҙ социализмдән аҡрынлап коммунизмға күсеүҙе тормошҡа ашыра.

Ғ. Ғүмәров,

М. Ғафури исемендәге тел, әҙәбиәт һәм тарих ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотрудниге.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

НЕФТЬ ӨСӨН КӨРӘШТЕ КӨСӘЙТЕРГӘ

Октябрьский ҡалаһының партия ойошмаһы нефть өсөн көрәштә ҙур ғына уңыштарға өлгәште. Ҡаланың 17 предприятиеһе Бөтә Союз социалистик ярышында еңеүсе булып сыҡты. Бер йыл эсендә нефть сығарыу 33,3 процентҡа, газ сығарыу 49,7 процентҡа, бораулау 20 процентҡа, ә хеҙмәт етештереүсәнлеге 18,7 процентҡа артты.

Нефть промыслалары өр-яңы техника—электробурҙар, автомат машиналар һәм башҡа камиллаштерелгән оборудованиелар менән механизациялаштырылды.

Ҡала партия ойошмаһы производство тормошона тәрәнерәк инә, предприятие администрацияһының хужалыҡ эшмәкәрлегенә контролде көсәйтә, алдынғы технологияны һәм стахановсы методтарҙы таратыуға күберәк иғтибар бирә башланы. Кадрҙарҙың техник белемдәрен арттырыу һәм уларҙы идеологик тәрбиәләү, хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эш алып барыу байтаҡ яҡшырҙы.

Был уңыштарға Октябрьский ҡала партия ойошмаһының V конференцияһында отчет доклады менән сығыш яһаусы партияның ҡала комитеты секретары иптәш Корольков та, доклад буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашыусы делегаттар ҙа туҡталып үттеләр.

Ләкин был уңышлыҡтар менән бер рәттән, ВКП(б) ҡала комитетының эшендә бик серьез етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Делегаттар ҡала комитетының эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу өсөн көрәште тейешенсә алып бармауы, тәрән насослы скважиналарҙы эксплуатациялау коэффициентының һаман да түбән булыуы, бораулауҙа ваҡыттың 30 проценте төрлө аварияларҙы бөтөрөүгә китеүе, төҙәлеш объекттарының хөкүмәт тарафынан билдәләнгән сроктарҙа эксплуатацияға тапшырылмауы тураһында һөйләнеләр.

Делегаттар, бигерәк тә, ҡала комитетының промышленность бүлеге һәм уның мөдире иптәш Герасимовтың эшендәге етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләнеләр.

— Промышленность бүлеге, — тине делегат иптәш Мозжухин, — үҙенә йөкмәтелгән бурысты йомшаҡ үтәй. Бүлек работниктары төрлө сводкалар йыйнауҙан әрнай алмайҙар.

— Улар предприятиеларҙа булмайҙар тиерлек, — тип өҫтәне делегат иптәш Григоренко, — булған ваҡытта ла төрлө мәғлүмәттәр йыйыу менән генә шөғөлләнәләр. Шул арҡала предприятиеларҙағы эштең фактик торошон белмәйҙәр, уларға тейешле ярҙам күрһәтмәйҙәр.

Конференция район партия ойошмаһын идеологик эш алып барыуҙағы етешһеҙлектәргә юл ҡуйыуҙа не. Делегаттар идеологик эштең тармаҡтарына ҡала комитеты етәкселек итмәүе тураһында... Партия мәғарифе селтәрендә пропагандистарҙы һайлап алыуға ла иғтибар бирелмәгән, тайпыл тик мәктәп һәм түңәрәктәргә йөрөү проценте бик түбән, коммунистар политик уҡыуға ... рылмағандар.

— Беҙҙең түңәрәктә, — тине ... бүлеге работниге иптәш Бурашев, уҡыу йылы башланғандан бирле пропагандист алышынды. Пропагандист булмау сәбәпле бер ай буйы занятие үткәрелмәне.

Партияның ҡала комитеты һәм бүлектәре партияның тәүге ойошмалары менән тығыҙ бәйләнештә тормай, уларҙың эшенә контроль һәм ярҙам ... шаҡ ойошторолған, секретарҙар семинарҙар үткәрелмәй, тәүге ойошмаларҙағы партия йыйылыштарының ... колдары уҡылмай, тимәк, ҡала комитеты тәүге ойошмаларҙың эше менән ҡыҙыҡһынмай.

Ҡала комитетының бюро ултырышында һәм пленумдарында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе ҡыҫырыҡлау ваҡиғалары бик йыш була.

— Мин ҡала комитетының бер ултырышында, — тине 2-се бораулау ... һының партбюро секретары иптәш Ашин, — ҡала комитетының эшендәге етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләп сығыш яһайным. Минән һуң шунда уҡ ҡала комитетының ике работнигы бер-бер артлы сығып, бер ҙә урынһыҙға минә ... лэй» башланылар һәм уларҙың ... тары башынан аҙағына тиклем ... адресҡа ғына йүнәлтелде. Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе тейешенсә ... дермәй тороп, ВКП(б)-ның ҡала комитеты үҙенең эшендәге етешһеҙлектәрҙе ... рөүгә тулыһынса өлгәшә алмаясаҡ.

Конференция асылған етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөүгә, партия эшен ... яҡшыртыуға йүнәлтелгән ҡарар ... итте һәм ВКП(б) ҡала комитетының составын һайланы.

Ҡала комитетының беренсе пленумында ҡала комитеты секретарҙары итеп ... ков, Хәликов, Шитова иптәштәр һайландылар.

Ю. Әхмә...

(үҙ хәбәрсебеҙ...)

Партия мәғарифе эшенә көндәлек иғтибар

Янауыл урта мәктәбе эргәһендәге партия ойошмаһы коммунист һәм партияһыҙ уҡытыусыларҙың идея-теоретик кимәлдәрен күтәреү мәсьәләһе менән систематик рәүештә шөғөлләнә. Бында «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» һәм иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса ике түңәрәк уңышлы эшләп килә.

Был ике түңәрәктә 36 кеше уҡый. Занятиелар регуляр рәүештә үткәрелеп барыла. Пропагандистар һәр бер тыңлаусының китап өҫтөндә үҙаллы тырышып эшләүен талап итәләр. Өйҙә уҡыу өсөн задание биргәндә тема буйынса ниндәй мәсьәләләргә айырыуса әһәмиәт бирергә кәрәклеген дә күрһәтәләр. Түңәрәктең тыңлаусылары барыһы ла занятиеларға әҙерлек менән һәм конспект төҙөп киләләр. Уҡытыусы Чаңышева, Ғаянов, Саяпова, Йосопова, Ғәлиева һәм башҡа иптәштәр үҙҙәренең идея-политик кимәлдәрен күтәреүҙә айырыуса тырышып эшләйҙәр.

Мәктәптең 7 уҡытыусыһы марксизм-ленинизм теорияһын үҙаллы рәүештә уҡып өйрәнәләр. Уларҙың һәр ҡайһыһының индивидуаль планы бар. Был планды үтәлешенә ныҡлы контроль ... дырылған.

Үҙ белемдәрен күтәреүҙә эшләгән ... тәштәргә ярҙамға төрлө темаларҙан ... циялар һәм докладтар уҡыла, ... сультациялар ойоштороло.

Бер үк ваҡытта уҡытыусылар ... рененң педагогик квалификацияларын күтәрәләр. 10 уҡытыусы педагогик ... тарҙа ситтән тороп уҡыйҙар. Шулар ... Ғабдулхаҡова, Дусметова һәм ... лин иптәштәр быйыл институт ... государство экзамендары тапшыра...

Үҙҙәренең идея-теоретик кимәлдәрен күтәреүҙә тырышып эшләүсе һәм педагогик квалификацияларын күтәр... уҡытыусылар уҡытыу-тәрбиә ... яҡшы һөҙөмтәләр бирәләр. Мәҫәлән, ... зика фәне уҡытыусыһы иптәш ... тың уҡыусылары бөтәһе лә уҡыт... гәрәләр. Коммунист иптәш Ә. Ғ... уҡытҡан 3 «А» класс уҡыусылары ... һәм 5 билдәләренә генә уҡыйҙар.

Ш. Дус...

Йомғаҡлау беседаларына әҙерләнәбеҙ

Мин «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса Учалы районы «Октябрь» колхозы эргәһендә ойошторолған юғарылатылған типтағы түңәрәккә етәкселек итәм. Тыңлаусыларҙың бөтәһе лә бынан элек партия тарихын өйрәнгәндәр. Шуға күрә марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен беренсе сығанаҡтар буйынса уҡыуға төп иғтибар бирелде.

Түңәрәк члендарының составы бер төрлө түгел. Уҡыуҙарҙың нормаль барыуын тәьмин итеү өсөн һәр тыңлаусы менән күберәк индивидуаль эшләргә тура килде. Һөҙөмтәлә коммунистар китап өҫтөндә эшләүгә өйрәнделәр, занятиеларға яҡшы әҙерлек менән йөрөй башланылар.

Хәҙер түңәрәк члендары йомғаҡлау занятиеларына ныҡлы әҙерлек алып ... лар. Занятиеларҙан тыш, үтелгән ... буйынса аҙнаға бер тапҡыр консультация... айырым әҫәрҙәр буйынса ... беседалар үткәрәм.

Үтелгән материалдарҙы яҡшыраҡ ... батлау өсөн тематикалар, китап к... ләре төҙөнөк. Консультациялар ... да үҙ-ара дискуссиялар ойоштораб... ауыр мәсьәләләрҙе асыҡларға, ... аңларға мөмкинлек бирә.

Беҙҙең түңәрәк члендары ... занятиеларына яҡшы әҙерлек менән ... ләр.

З. Әһлиул...

пропаганд...

Лекторҙар группаһы яҡшы эшләй

Ғафури районы Ҡотлоғужа ауыл Советындағы уҡыу өйө мөдире иптәш Ғәйнуллин үҙ эшенә намыҫ менән ҡарай. Уның инициативаһында 7 кеше составында лекторҙар группаһы эшләй.

Улар колхозсылар араһында докладтар һәм лекциялар менән йыш ҡына сығыш яһайҙар.

Һуңғы көндәрҙә колхоз председателе иптәш Йомағужин «Ауыл хужалығы ... теле Уставы—колхоз ҡоролошоноң ... шамаҫ законы ул», медпункт мөдире ... занов «Аборттың зарары», уҡытыусы иптәш Янышева «Халҡ-ара хәл» ... һында лекция уҡынылар.

Лекцияларҙы йөҙҙән артыҡ ... тыңланы.

Й. Ғәли...

ТЕАТР

„Яҙғы йыр“

(Назар Нәжми әҫәре. Музыкаль пьеса. А. Мөбәрәков постановкаһы).

«Яҙғы йыр» пьесаһынан бер күренеш. Айдар (артист Х. Ҡудашев) һәм Разия (артистка Р. Янбулатова).

Х. Бикҡулов фотоһы.

Йырҙы тормош үҙе тыуҙыра. Совет кешеләренең ҡайнар тормошо, ҡөндәлек эше, тегә йәки был өлкәләге ныҡышмалы хеҙмәте — ул үҙе гүзәл йыр. Тормоштоң эсендә тыуған йыр үҙ нәүбәтендә кешеләргә йәшәргә ярҙам итә, уларҙы эшкә, көрәшкә дәртләндерә. Ана шулай итеп, тормош менән йыр араһында берҙәмлек барлыҡҡа килә. Йыр — тормош йыры һәм, киреһенсә, тормош — йыр булып яңғырай.

Художество әҫәр өсөн был бик мөһим һәм отошло тема. Әҫәрҙең сюжетына бер нисәй ҙә ҡатмарлы үрелеш индерелмәй. Турыһан-тура бына тап ошо темаһы ғына хәл итеү бурысын алға ҡуйғанда ла, зур әҫәр тыуҙырырға мөмкин булыр ине.

Тағы бер миҫал: талантлы, йәш студент бер ҡыҙҙы ярата. Ул ҡыҙ ҙа студентка — ВУЗда уҡый. Ләкин ул ҡыҙҙың донъяға ҡарашы артта ҡалған булып сыға һәм ул хатта был егеттең мөхәббәтен дә шикһеҙ ҙә булһа шәхси отош өсөн файҙаланырға тырыша. Уның егетте саф күңелдән түгел, бәлки обывателдәрсә отошло иҫәп менән генә яратыуы беленә. Егет унан баш тарта һәм уға тиң булған саф күңелле, эш һөйөүсән икенсе бер ҡыҙҙы ярата башлай. Икенсе ҡыҙ ниндә был тәкдимде бик тиҙ генә ҡабул итә алмай. Үҙе лә егетте яратып йөрөүенә ҡарамаҫтан, ниташ ҡыҙына ҡарата булған ҡатылығын киҫәрә алмай. Әлбиттә, улар, аҙаҡ килеп, ҡауышалар һәм бергә йәшәй башлайҙар.

Был — саф мәхәббәт темаһы. Тик ошо теманы хәл итеү бурысын алғанда ла һис шикһеҙ совет йәштәренең иҡтибарын ныҡ йәлеп итерлек матур әҫәр тыуҙырырға мөмкин булыр ине.

Икенсе бына тағы бер ваҡиға: Ауыл хужалығы фәндәре буйынса республиканың күренекле ғалимдәрҙең береһе ауылға ғилми эш менән килгән сағында бер кенә йырсы егеткә тап була. Егеттең матур тауышы уның иғтибарын йәлеп итә һәм был талантты ул үҙе менән ҡалаға алып ҡайтып, музыка өлкәһендә эшләүсе белгестәргә күрһәтә. Күренекле музыкант етәкселегендә егеттең таланты интенсив алға китә һәм музыка белгестәре уның киләсәген тик ошо өлкәлә генә күрә башлайҙар. Ә егеттең шефына был оҡшамай. Сөнки егет үҙенең «төп эшенә» лә, ауыл хужалығы фәндәре буйынса ла, зур уңыштарға ирешә һәм профессоры уның киләсәген тап бына ошо өлкәлә күрә. Музыканы ул күңел асыу өсөн генә хеҙмәт итә торған нәмә тип аңлай. Шулай итеп яңы, үҙенсәлекле конфликт килеп сыға.

Һис шикһеҙ, ошо конфликт нигеҙендә үҙенә башҡа бер әҫәр тыуҙырырға мөмкин булыр ине.

«Яҙғы йыр» пьесаһында бына ошо темалар һәм материалдар бөтәһе лә урын алған. Был — күп темалы әҫәр. Әлбиттә, алынған темаларының ҡайһы берҙәрен сисеп етмәгәне өсөн авторҙы шелтәләргә мөмкин. Әҫәрҙе күп темалы яһарға тырышып, ҡайһы бер ваҡиғаларҙы, ҡайһы бер образдарҙы өҫтән генә һүрәтләп үтеүе өсөн дә авторға үпкә белдерергә була. Ләкин былар әле «Яҙғы йыр» пьесаһының йылы, матур, йәнле һәм талантлы әҫәр икәнен шик аҫтына ҡуя алмайҙар. Совет йәштәре, студенттар тормошонан яҡшы әҫәр тыуҙырыуы менән беҙ йәш драматургты ҡотларға тейешбеҙ.

«Яҙғы йыр» пьесаһы сәхнәлә лә матур һәм йәнле яңғыраны. Был спектакль Башҡорт Государство Академия театрының быйылғы сезон эсендәге иң уңышлы спектаклдәренең береһе тиһәк, хата булмаҫ. Спектаклдә ҡатнашыусы коллектив тә, уның постановщиге А. Мөбәрәков иптәш тә, авторҙың фекерен дөрөҫ аңлағандар.

Әлбиттә, спектаклдә ҡытыршылыҡтар юҡ түгел. Улар күберәк пьесаның авторы күреп етә алмаған деталдарҙа күҙгә бәрелә. Мәҫәлән, обывателлек батҡаҡлығына бирелгән Миляның ҡапыл төҙәлеп китеүе ышандырмай һәм студенттар коллективенең, иптәштәре Миляның яҙмышы менән яҡындан ҡыҙыҡһыныуҙары ныҡ сағылмай. Унан башҡа, тағы йомшағыраҡ эшләнгән сәхнәләр бар: мәҫәлән, Разияның тыуған көнөнә арналған мәжлесте тағы күтәрергә, тағы ла йәнләндерергә мөмкин булыр ине. Аҙаҡ килеп, спектаклдең финалы бик йомшаҡ. Эпилог кәсле түгел. Автор бары тик кемдең ҡалай булып сығыуы тураһында хәбәр итеү менән генә сикләнә. Шул арҡала спектаклдең финалы ла ҡапыл төшөп китә һәм, күрәһең, ул сәхнәне нисек булһа ла күтәреү маҡсатынан сығыптыр инде, режиссер аҙаҡта бөтә ҡатнашыусыларҙы теҙеп ҡуя ла, йырлата... Был тәбиғи түгел. Һәм, нисектер, күк-күлдәктәр дәүерен хәтерләтә.

Әлбиттә, ошондай ҡытыршылыҡтары булмаһа, спектакль тағы ла тулыраҡ яңғыраған булыр ине. Ләкин, ошо килеш алғанда ла был спектаклде тормошло һәм ҡыҙыҡлы спектакль тип әйтә алабыҙ.

Режиссерҙың оҫта ҡулы тейешлерәк күҙгә күренеү менән бер рәттән, спектаклдә ҡатнашыусы актерҙарҙың да үҙ ролдәрен зур ҡыҙыҡһыныу менән башҡарыуҙарын әйтмәй үтеү мөмкин түгел. Бигерәк тә пьесалағы төп ролдә — Айдар образын алып барыусы артист Хәсән Ҡудашевтың уйнауын һыҙыҡ өҫтөнә алып үтергә кәрәк. Ҡудашев образдың эсенә ингән. Ул талантлы совет йәштәренең бер вәкиле булған Айдар образын саф күңелле, темпераментлы, эшлекле, ғорур һәм шул уҡ ваҡытта кешелеҡле егет итеп күҙ алдына баҫтыра алды.

Айдарҙың яҙмышында хәл иткес урын тотҡан ике ҡарт ғалим — Алексей Иванович (артист З. Игдаулатов) һәм Рахим Сафич (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы F. Тукаев). Сәхнәлә һәр ҡайһыһы үҙенсә тормошло һәм матур булып күҙ алдына баҫты. Улар тамашасыны ышандырырлыҡ, һоҡландырырлыҡ кешеләр булып күренделәр. Бында, етешһеҙлек итеп, бары тик шуны ғына күрһәтергә мөмкин: был ике ҡарттың һүҙ ҡараштары торған сәхнәһен ҡалҡәләндереү маҡсатында ваҡ деталдар менән тултырыу ярамаҫ ине. Нинә инде уларҙың икеһенә лә бысаҡ тоттороп, яңылыш булһа ла берберенен ҡурҡытырлыҡ хәлгә килтереп еткерергә? Быныһы, әлбиттә, артыҡ һәм, нисектер, спектаклдә натурализм элементтәре барлығы тураһында һөйләй.

Талантлы артистка Р. Янбулатова был спектаклдә лә үҙенең яҡшы уйнауы менән, Разия образын дөрөҫ асыуы менән тамашасыларҙың иғтибарын йәлеп итә алды.

Шат күңелле, энергиялы студент — Хәмит образын башҡарыусы артист Ғ. Ғалламов үҙендә тағы зур мөмкинлектәр барлығын күрһәтте. Был юлы уға уйнапы тип кеңә әйтеүе лә аҙ кеүек, ул сәхнәлә йәшәне, ҡайнар тормош кисерҙә тиһәк, дөрөҫерәк булыр.

Артист Тәнзәфәров башҡарған ролде лә тулы ҡанлы һәм тормошло тип әйтергә була. Ундай Ғәптелминскийҙар тормошта йыш ҡына осрайҙар. Артист Тәнзәфәров образды бик оҫта тотоп алған. Ләкин автор ҙа, режиссер ҙа һәм шул уҡ ролде башҡарыусы артист Тәнзәфәров тә, был образды артығыраҡ шаржировать итеп биргәләр. Был бер. Ә унан һуң ғәмүмән был образ тамашасыла уйланыу тыуҙыра: былдай кеше лә үҫә йәки үҙгәрә алалыр бит инде. Ә ул — баштан-аяҡ бер төрлө, бер үк кимәлдә йөрөй бирә. Үҫеш, алға китеш күренмәй.

Камил (артист Усманов), Миля (артистка Камалетдинова), Люся (артистка Вахитова) образдары хәтерҙә ҡалалар. Ләкин былардан башҡа ҡыҙҙар — студенткалар автор тарафынан һәр ҡайһыһы үҙенсәлекле ҡылыҡтар, деталдәр менән байытылмағандар. Ғәмүмән, пьесала ҡыҙҙар бөтәһе лә бер төрлөрәк булып күҙ алдына килеләр.

Спектаклдең оформлениеһе (художник БАССР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле F. Имашева) уңышлы, матур һәм бай.

Музыкаль оформление (композитор З. Исмәғилев) шулай уҡ эстәлекле. Был спектаклдә йырланған йырҙар һис шикһеҙ тамашасы тарафынан һөйөлөп йырланасаҡтар.

«Яҙғы йыр» спектакле быйылғы сезонға үҙенең мәғәнәһе менән яҙғы, дәртле йыр булып килеп инде. Был башҡорт совет драматургияһының да, театрҙың да уңышы.

Кирәй Мәргән.

Мансур Сөндөклө

ФАБРИКА ҠЫҘҘАРЫ

(Эскиз)

1.

Станоктар шаулап торалар,
Аҡ мамыҡ ептәр өҙөп,
Мин күрәм улар алдында
Илемдең ике ҡыҙын.
Күк блуза кейгән Тамара
Яҡты цех буйлап атлай,
Күҙҙәрендә ул һәр ваҡыт
Матур йылмайыу һаҡлай.
Фәниә лә шундай уҡ ҡыҙ,
Тик тоҫта генә ара,
Береһенең күҙҙәре зәңгәр,
Береһенең — муйыл ҡара.
«Күп станоксы» — ике йәштәш,
Һәр ваҡыт алғы сафта,
Был ике ҡыҙҙың исемен
Беләләр бөтә цехта.

2.

Фәниәнең бер каләптә
Буйлыҡ өҙөлдө ҡапыл,
Ә икенсе станогына
Һоҫа ҡуйырға ваҡыт.
Тамара килде ярҙамға,
Һоҫаға һуҙҙы ҡулын...
Өҙөклөккә бер секунд та
Бирмәйҙәр ҡыҙҙар урын.
Ҡай сағында Тамара ла,
Шундай уҡ хәлгә төшә,
Булыша улар, бер-береһенә,
Ҡул-алмаш булып эшлә.
Һәр ваҡыт алғ өҫтәндә,
Ҡорос керәләр гөрләй,
Ҡыҙҙар ҡулында сәғәттәр
Буш минуттарҙы белмәй.

3.

Ошо көндә минә цехта
Күңелле булды мәгәр:
— «Ике күрше, бишәр норма,
Бирҙеләр...» тигән хәбәр.
Цех мастеры ҡыҙҙарымдың
Ҡулдарын ҡыҫып һөйҙә:
— Һеҙҙе бөгөн еңеү менән
Тәбрик итәмен. — тине.
Ә Тамара, мастер киткәс —
Ҡул йәйеп бейеп алды,
Азат тигән егет уның
Ҡанатын күреп ҡалды.
Һәм был егет ҡыҙыҡһынып
Ҡыҙҙар янына килде,
Майлы ҡулын һерт-һертә
Ҡашын һикертеп көлдө:
— Шаярмағыҙ әле, ҡыҙҙар,
Һеҙҙе маҡтайҙар... ярар,
Ә бит еңеү шатлығында
Минең өлөшөм дә бар.
Станоктарға һуҙҙы ҡулын:
— Минең «Тигрҙар» былар,
Һеҙ нәмә эшләр инегеҙ,
Төҙөк булмаһа улар...

4.

Эштән ҡайта туҡыусылар,
Шау килеп тора ҡала,
Бәхетле кис ҡыҙҙарымды
Үҙ ҡосағына ала.
Уңға ҡарайҙар — театр,
Һулға ҡарайҙар — баҡса,
Тамара менән Фәниә
Баҫып ҡайталар ташҡа.
Ҡултыҡлашып ҡайта улар
Аҙымды бергә ҡәйләп,
Күҙҙәренән йәш килгәнсе
Көләләр, ҡыҙыҡ һөйләп.
Ни булмай тиһең тормошта
Был бит ул йәшлек таңы,
Нинтәй көлкә, һиңә йәштәр
Һөйләрҙәрме икән уны.
Икеһе лә тигеҙ буйға,
Айырма түгел йыраҡ,
Береһенә блуза килерәк,
Береһенә тығыҙыраҡ.

5.

Нәм кереп китте булмаға,
Смена ҡайтып ингәс...
Фәниә башланы һүҙҙе
Үҙен көҙгөлә күргәс:
— Күр әле миңә, Тамара,
Мин бит һис арымағанмын.
Ахры, мин ерҙә ҡош кеүек
Осорға яралғанмын.
Тамара ла ҡанатланды:
— Һиҙҙе әле, миңә кәҙгә.
Хәҙер баҡсаға сығабыҙ
Бар ҡала күрһен беҙҙе.
Ал ҡүлдәк кейҙе Фәниә,
Улмы, сәскәме матур?
Шуны һынар өсөн бөгөн
Баҡсаға бармаҡсы ул.

6.

Тик ҡыҙҙар ҡыҙыҡ булдылар,
Әйтмәйем быны уйнап,
Йөрөргә ояҙы улар
Икәүләп баҡса буйлап.
Фабком, уларҙы ҡалала
Бар эшсе күрһен тигән,
Шуның өсөн рәсемдәрен
Баҡсаға килтереп элгән,
Дуҫтына ҡарай Фәниә,
(Электр яҡты яна.)
Әммә бына, үҙ рәсеменә
Ҡарарға ҡыйын уға...
Почет таҡтаһы алдында
Кешеләр йөрөп тора,
Ҡыҙҙарҙы бөтә егеттәр
Таныған төҫлө була!
Етмәһә, бас тауышы менән
Һөйләнде Азат килеп:
— Бына, был ҡара ҡашлыһы,
Минең районлаш, тиеп.
Аҡ мыйыҡлы, цех мастеры
Ҡулдарын һалған артҡа,
Һөйәк һаплы трубкаһын
Ғорур төҫ менән тарта.
Ул һөйләй тоҫлә әсенән:
— Сибәр шул, минең ҡыҙҙар,
Ер шарын етә урарлыҡ
Туҡыма бирҙе былар...

7.

Ә Фәниә Тамараны
Төрткөләп ҡайта үртәп,
Ләкин Тамара өндәшмәй
Маңлайҙан тирен һөртә...
Ысында бер аҙ туҡынған ул,
Ләкин һиҙҙермәй үҙе,
Бит алмаларына сыҡҡан
Еңел ашҡыныу эҙе.
Ләкин ҡайтыуҙың сәбәбе
Оялсанлыҡтан түгел,
Тамараның план менән
Эше бик тығыҙ бөгөн.
Бына ул йыйнаҡ өҫтәлдән
Ҡулына дәфтәр алды,
Ул уйланды... ә күҙендә
Йылмайыу һаман ҡалды.

8.

Фәниә бала шикелле
Дәфтәргә ситләп ҡарай,
Тамараның борсолған
Өҙөн сәстәрен тарай:
— Юҡ инде хәҙер, аппағым,
Алдынғылыҡты бирмәм,
Беләһеңме, мин туҡыусы,
Бар инде кейендерәм.
Ҡарамай уға Тамара:
— Бит, ти ҙә, яҙа бирә,
Дәфтәренән уңыштарҙың
Яңы юлдарын күрә.

9.

Станоктар шаулап тора,
Аҡ мамыҡ ептәр өҙөп,
Мин күрәм улар алдында
Илемдең ике ҡыҙын.
Белмәй был ҡыҙҙар ҡайғыны,
Ҡулда станоктар кәсә,
Береһе арттә ҡалһа уға,
Булыша икенсеһе.
Икеһе лә тигеҙ буйға,
Тик шунда ғына ара:
Береһенең күҙҙәре зәңгәр,
Береһенең — муйыл ҡара.
Мең-мең орсоҡтар ярышып
Әйләнә бында бергә,
Йыртыҡ күлләкле кешеләр
Булмаһын өсөн ерҙә.

1951 йыл, март.

АҒАС УЛТЫРТЫУ УН КӨНЛӨГӨ

Звенолар ағас ултырталар

Бүздән. Быйыл районда 840 гектар, шул иҫәптән, «Ҡылаш» һәм Тимирязев исемендәге колхоздарҙа 20-шәр гектар, майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыласаҡ.

Сәрмәсән ЛЗС-ының комсомолецтары Ринат Мөхәмәтьянов, Асҡар Сафин, Рауил Мамаев иптәштәр, социалистик ярышҡа ҡушылып, лә 60-ар гектар, кеҙ 30-ар гектар майҙанда ағас ултыртырға, 70-әр гектар майҙандағы полосаларҙы дүртәр тапҡыр культивацияларға йөкләмә алдылар. Жданов исемендәге колхоз комсомол ойошмаһы ла ошо башланғысҡа ҡушылды. Бында комсомолецтар аҙ ваҡа 10 гектар майҙанда ағас ултыртыу йөкләмәһен алдылар һәм эшкә башланылар.

Киров исемендәге колхозда иптәш Хәкимов етәкселек иткән ағас үҫтереү звеноһы баҫыуҙа ағас ултырта башланы. «Ҡылаш» колхозында 6 гектар, Хрущев исемендәге колхозда 4 гектар майҙанда ағас ултыртылды.

Х. Саттаров.

* * *

Бәрә. (Телефон аша). Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының урман һәм баҡса ағастары ултыртыу буйынса ун көнлөк үткәреү тураһындағы ҡарарын Буденный исемендәге колхоз члендары зур күтәренкелек менән ҡаршыланылар. План буйынса быйыл был колхоз 14 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртырға һәм элек ултыртылған 4 гектар майҙанда ремонт үткәрергә тейеш ине.

Ошо көндәрҙә иптәш Белоусов етәкселек иткән бригада ағас ултырта башланы. Бригада члендары, үҙ-ара социалистик ярыш нигеҙендә эшләп, зур ғына уңыштарға өлгәштеләр. Улар тик тәүге көндә генә 5 гектар майҙанда 2 мең төп шыршы, 3 мең төп юкә һәм 5 мең төп тополь ағасы ултырттылар.

Колхозда ағас ултыртыу эше зур ойошҡанлыҡ менән дауам итә.

Х. Сафин.

* * *

Аҡъяр. (Телефон аша). Хәйбулла районы колхоздары урман һәм баҡса ағастары ултыртыу буйынса иғлан ителгән ун көнлөктә баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын ултыртыуҙың йыллыҡ планын үтәү өсөн көрәшәләр. Хәҙер районда 55 гектар майҙанда ағас ултыртылды.

Май алды социалистик ярышында алда барыусы ауыл хужалығы артелдәренән «Красная звезда» колхозы 14 гектар, «Красное знамя» колхозы 8 гектар майҙанда ағас ултырттылар. «Красная звезда» колхозы планды 50 процентка үтәне инде.

Ә. Хәсәнов.

* * *

Усть-Икин. (Телефон аша). Мәсетле районы комсомолецтары һәм йәштәре, урман һәм баҡса ағастары ултыртыу буйынса ун көнлөккә ҡушылып, колхоз ауылдарын йәшелләндереү буйынса эшкә башланылар.

Районда 800 гектар ағас ултыртыу өсөн акация үрсетмәләге әҙерләнде. Мәсетле урта мәктәп уҡыусылары көсө менән мәктәп ерҙәһендәге емеш-еләк баҡсаһы киңәйтелә. Унда бер нисә көн эсендә генә 600 төп сейә, 1000 төп ҡурай еләге, 900 төп ҡарағат ҡыуаҡтары ултыртылды.

Мәсетле урта мәктәп уҡыусылары колхоз ауылы урамдарын йәшелләндереүҙә зур ярҙам күрһәтергә һүҙ бирҙеләр.

Н. Мостафин.

Тәнкит һәм библиография

М. ҒАФУРИҘЕҢ БӨГӨНГӨ ТАУЫШЫ

Ошо көндәрҙә Башгосиздат башҡорт әҙәбиәтенең классигы, уның яҙма әҙәбиәтен башлап ебәреүсеһе Мәжит Ғафуриҙең «Һайланма әҫәрҙәрен»[1]) сығарҙы. Бығатиклем М. Ғафури әҫәрҙәре был дәрәжәлә тулы һәм зур иғтибар менән сығарылғаны юҡ һәм был һис бер ғәфү ителмәҫлек етешһеҙлек булып тора ине. Беҙҙең киң ҡатлам уҡыусыларыбыҙ бик күптән үҙҙәренең китап шкафтарында ошондай тулы һәм матур итеп сығарылған китапты булдырырға теләнеләр. Китап тураһында яҙа башлау менән, гәзиттә мәҡәләнең аҙағында әйтелә торған ошо һүҙҙәрҙе был юлы иң элек әйтке килә.

Үҙенең ижадын бынан ярты быуат (1902 йылда) башлаған был өлкән шағирҙең әҙәби мираҫы башҡорт һәм татар әҙәбиәте өсөн генә түгел, күп милләтле совет әҙәбиәте өсөн бер үк дәрәжәлә әһәмиәтле. Мәжит Ғафури ижады беҙҙең көндәрҙә лә яңы, киңә, бөгөн яҙылған кеүек ишетелә. Ул бөгөн дә беҙҙең иң алдынғы шағирҙәребеҙ менән бер сафта тороп коммунизм, тыныслыҡ өсөн, Америка-Англия һуғыш уты тоҡандырыусыларына ҡаршы көрәшә. Бөгөн дә ул беҙҙең менән бергә:

Совет кешеләрен бөлгөнлөккә
Һалған һуғыштарға ҡаршы,
Беҙҙә һуғыш маршынан элек
Уйнала тыныслыҡ маршы

тип бөтә совет кешеләренең теләген сағылдырған йыр йырлай. Сөнки коммунистар партияһы, бөйөк Сталин етәкселегендә бөтә донъя хеҙмәтсәндәре, прогрессив кешелек үҙенең күҙ ҡарашын беҙгә йүнәлткән. Сөнки —

Миллиард халыҡ бөгөн беҙгә ҡарай,
Ысын һөйөү, ихлас күңелдән,
Бөгөнгө көн беҙҙең СССР-ға
Миллиард алҡышлы күҙ төгәлгән.

Сөнки:

...Хәҙер СССР булып әүерелде,
Бөтә ер шарының ҡиблаһы.

Мәжит Ғафури өлкән ижад юлын баштан уҡ тигеҙ яңғырай торған тауыш менән башламаны. 1905 йылға тиклем әле ул бәхетһеҙ, өлөшһөҙ, иҙелгән кешеләрҙе күреп моңайҙы. Был бөлгөнлөктән ҡотолоу өсөн кешеләрҙе ғилем алырға, һөнәргә эйә булырға, тәрбиәле, әҙәпле булырға саҡырҙы. Хатта ул бик йыш ҡына, әгәр ошоларҙы эшләгәндә, кешеләрҙе бәхетле итергә, общественны үгетләү менән төҙәтергә мөмкин, тигән уйға ла килә. Ләкин һәр яҙған шиғыры һайын тормош менән килешергә ярамағанлығына, уны төҙәтергә кәрәк тигән фекергә яҡынайа барҙы. 1905 йыл революцияһы тауышын ишетеү зур хәрәкәтте күреү менән «Азатлыҡ ҡояшының нәмә икәнен», «Иҙелгән күңелдәрҙе бөтәйтеү», «Ҡаршылыҡты юлдан ыңғытырға» мөмкин икәнлеген төшендә һәм халыҡты революцион көрәшкә саҡырҙы. Ошо уңай менән «Шатлыҡ шиғырын» яҙҙы:

Был көндөң ҡәҙерен белеү кәрәк,
Был көн кеүек шатлыҡлы көн булыр
һирәк.
Ҡулыбыҙҙан быҙау сылйырҙы
алынғанда,
Ҡуҙғалайыҡ, әфәнделәр, беҙ тиҙерәк.

Һайланманы төҙөүсе иптәштәр китапты шағирҙең 1905 йылда яҙған ошо шиғыры менән башлап бик дөрөҫ эшләгәндәр. Дөрөҫ, М. Ғафуриҙең ижад юлын, уның үҫешен тулыраҡ аңлау өсөн, бигерәк тә әҙәбиәт уҡытыусыларға ярҙам итеү өсөн алданыраҡ алыу ҙа кәрәк булғандыр, ләкин был «Һайланма әҫәрҙәр» төҙөүселәр бурысына түгел, бәлки «тулы йыйынтыҡ» төҙөүселәр бурысына инә. Китапта шағирҙең 1905 йыл поэзияһы уның төп ҡарашын сағылдырған биш шиғыр менән бик яҡшы күрһәтелгән.

Мәжит Ғафури иҫке тормоштоң ғәзелһеҙлеген, Октябрь социалистик революцияһынан һуң айырата зур художество көсө менән күрһәтте. Һәм ул әҫәрҙәрҙең идея ягын тағы ла нығыраҡ күтәрҙе. Октябрь революцияһының беренсе көндәрен шағир зур пафос менән «Хисап көнө» тип хөрләк, азатлыҡ байрағы булған Ҡыҙыл байраҡты бөтә байраҡтарҙан юғары күтәрә. Совет кешеләренең революцияның еңеүе менән булған беренсе теләге һуғышты бөтөрөү икәнен кәсле тауыш менән белдерә: «Ҡысҡырайыҡ бер юлы, бөтһөн һуғыш, бөтһөн һуғыш!».

Мәжит Ғафури, тормошоноң иң һуңғы минутына тиклем революцияны һаҡлау, Совет власын ныҡытыу, сит ил империалистарының мәкерле пландарын фашлау, Ленин — Сталин партияһы байрағы аҫтына туплаңыуға саҡырып, зур художестволы тәрән патриотик шиғырҙар яҙҙы.

Мәжит Ғафури—йәш башҡорт әҙәбиәтенең һәр тармағында, һәр жанрында башлаусы, беренсе дөрөҫ тауышты биреүсе һәм иң зур оҫтаһы. Поэзияла, прозала, баснела, балалар әҙәбиәтендә — һәр тармаҡта ул иң яҡшы өлгөләрҙе бирҙе. Ул драматургияла ла, шуның өҫтөнә совет тематикаһына яҙылған сәхнә әҫәрендә лә беренсе ҡылды сиртте. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был «Һайланма әҫәрҙәрҙә» уның драматургияһы күрһәтелмәгән. Был кәрәк ине һәм быны китаптың етешһеҙлеге тип әйтергә кәрәк.

Бөйөк Сталиндең тел ғилеме буйынса булған һуңғы хеҙмәттәренән һуң телгә булған иғтибар һәм талапсанлыҡ айырата зур, бығаса булмаған дәрәжәлә юғарылыҡҡа күтәрелде. Башҡорт әҙәби телен үҫтереү саралары күргән ошо мәлдә, беҙ Мәжит Ғафуриҙән бик күп яҡлап өйрәнергә тейешбеҙ. Беҙ «Һайланма әҫәрҙәр» буйынса был өлкәлә бик зур өлгөләр күрәбеҙ. Бында аңлашылыуы ауыр, йә булмаһа ике төрлө аңларға мөмкин булған фразаларҙы һис осрата алмайһығыҙ. Бигерәк тә прозала, айырата алғанда, «Ҡара йөҙҙәр» повесе теле үҙенең ябайлығы, шул уҡ ваҡытта образлылығы менән бөгөнгө башҡорт прозаһының төшөмө булып тора. А. С. Пушкин яҙыусыларҙы, бигерәк тә прозаиктарҙы «Прозаның беренсе ҡиммәтле сифаттары дөрөҫлөк һәм ҡыҫҡалыҡ. Проза фекерҙәр һәм фекерҙәр талап итә — шунһыҙ матур һөйләмдәр бер нигә лә хеҙмәт итмәйҙәр» тип өйрәтте. А. М. Горький был тәңгәлдә өҙлөкһөҙ көрәш һәм өйрәтеү алып барҙы.

Мәжит Ғафури татар әҙәби теленең ғәрәп, фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған заманында ла осорҙаштарына ҡарағанда халыҡ теленә бик яҡын торҙо. Билдәле был өлкән мастерҙа ла йыш ҡына киң массаға ят булған, хәҙер инде әҙәби телдән төшөп ҡалған һүҙҙәр осрай. Был бигерәк тә уның тәүге ижадтарына ҡайтып ҡала. Һайланманы төҙөүселәр һәм редакторҙар М. Ғафури әҫәрҙәре бөгөнгө совет уҡыусыларына, бигерәк тә, йәштәргә тулы аңлайышлы итеү юлында ябай редактор булып түгел, ижадсы булып намыҫлы эш өлгөләре биргәндәр. Уларҙы бөгөнгө башҡорт әҙәби теленә яҡынлаштырғандар. Ихтимал, академик баҫмалар өсөн был юлға баҫыу бик үк кәрәкмәйҙер ҙә. Ул телдең үҫешен аңлауға ҡамасаулыҡ итер ине. Ләкин киң массаға бирелә торған был һайланмала быны кәрәк тип танырға кәрәк, һәм кес һалған иптәштәрҙең хеҙмәтен баһаламау мөмкин түгел. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы саҡтарҙа Ғафуриҙең телен, лексикаһын ғына түгел, бик үк талап ителмәгән урында һөйләм төҙөлештәрен дә үҙгәртеп ебәреү кеүек килешерлә мөмкин булмаған урындар ҙа осрай. Мәҫәлән, шағир 1905 йылда, икенсе төрлө әйткәндә, бынан 45 йыл элек:

«Ясадылар ҡулны аяҡ, аяҡны ҡул,
Диделәр: «Бу заманда шул мәғҡул!»
Алмашынды ҡолаҡ, күҙләр урынынан
Күренде халыҡ-ара ышбу мәҡбүл.

тип яҙа. Бында беҙгә аңлашылмаған бер һүҙ ҙә юҡ. «Мәғҡул» да, «Ышбу» ҙа бик яҡшы аңлашыла. Хатта әҙәби телебеҙҙә «ҡабул» һүҙе йөрөп ятҡанда «мәҡбүл» дә контекст эсендә айырым аңлатма һорамай. Ләкин ошо куплетте редакторҙарҙың:

Әйттеләр: — Был заманда шул кәрәк,
Яһанылар аяҡты ҡул, ҡулды аяҡ,
Халыҡ ара шулай кәрәкле табылды
Алмашынды үҙ урынынан күҙ һәм
ҡолаҡ.

тип үҙгәртеүҙәренең кәрәклеге беҙгә аңлашылып етмәй. «Ышбу» (орфография) «мәҡбүл» (лексика) алыштырылған хәлдә лә «тиҙеләр» ҙе «әйттеләр», «мәҡбүл» ды «кәрәк» менән үҙгәртеүҙең кәрәклеген аңлауы ауыр. Әллә рифма өсөнмө? Әгәр шулай булһа, ошо ваҡиғаны иҫкә төшөрәйек. А. С. Пушкин шағиртәнҡитсе А. Вяземскийҙан «беҙҙең тел рифмаға ярлы» тигән һүҙҙе ишеткәс, «был һүҙҙе әйтергә һинең нисек күңелең тартты» тип рус телен хурлауға асыуланған. Һәр хәлдә башҡорт теле лә рифма тапмаҫлыҡ дәрәжәлә ярлы түгел.

Был яҡшы һайланманың тағы ла бер етешһеҙлегә итеп, китапҡа баш һүҙ бирмәүҙе әйтергә кәрәк. Был бик мөһим мәсьәлә. М. Ғафури, әлбиттә, өйрәнелмәгән яҙыусы түгел. Шағирҙең ижады тураһында академик Павло Тычинаның бик гүзәл хеҙмәте, хатта филология белгестәренең диссертациялары иғлан ителде. Дәреслектәрҙә бик күп мәҡәләләр бирелде. Шулай ҙа беҙ яратҡан шағирҙең иҫкермәй торған тауышы һәр ваҡыт яңы фекерҙәр әйтеүҙе һорай. Әгәр был китапҡа баш һүҙ биргән хәлдә беҙ уҡыусыларға шағир ижадының яңы ноҡталарын табыр, һайланманы тап бөгөнгө бурыстарҙы сағылдырыусы яңы әҫәр итеп тәҡдим итер инек. Бында беҙ һуғыш уты тоҡандырырға теләүсе Америка, Англия империалистарының һүҙ ботҡаһы бешереүҙәренә ҡаршы А. М. Горький, В. В. Маяковский традициялары тураһында фекер йөрөтә алыр инек. Ул шағирҙең мираҫына ҡарата булған хөрмәтте тағы ла күтәрер ине. Мәҫәлән, беҙ бөгөн был йыйынтыҡта М. Ғафури тарафынан Башҡортостан совет яҙыусыларының беренсе съезына ҡарата яҙған «Ҡәләм һалдаттарына» тигән бик гүзәл шиғырының индмәй ҡалыуына аптырайбыҙ. Бында шағирҙең А. Горький, В. Маяковский традицияларын ғәжәп асыҡ төшөнөүе, һис бер аңлатмаһыҙ ярылып ята.

Зур эш эшләнгән. Был эшкә квалификациялы кәстәр — редакторҙар тартылған. Һайланма әлеккеләре кеүек ашығыс һәм өҫтән эшләнмәгән. Хатта полиграфия мөмкинлектәре лә егелгән. Киләсәктә был өлкән мираҫҡа ҡарата булған иғтибар тағы ла көсәйһен ине. Сөнки совет кешеләре талапсанлыҡты һәр ваҡыт үҫтерә, көсәйтә, ҡатлауландыра, ғилми нигеҙгә ҡуя баралар.

Сәғит Агиш.

[1]) Төҙөүселәр: А. Ҡудаш, Б. Еникеев. Редакторҙары: С. Ҡудаш, Ғ. Ғүмәр. Башгосиздат баҫмаһы. 590 бит, хаҡы 22 һум.

Государство сауҙаһы работниктәренең кәңәшмәһе

Ошо көндәрҙә Өфөлә, государство сауҙаһы работниктәренең кәңәшмәһе булып үтте. Унда ВКП(б)-ның ҡала комитеттәре секретарҙары, ҡала Советы исполкомдары председателдәренең урынбаҫарҙары, ОРС начальниктәре, торг һәм магазин директорҙары ҡатнаштылар.

Кәңәшмә Башҡорт АССР-ының ҡалаларында сауҙа эштәренең торошо һәм уны артабан яҡшыртыу тураһындағы мәсьәләне тикшерҙе. Был мәсьәлә буйынса БАССР Министрҙар Советы Председателе урынбаҫары иптәш Гашев доклад менән сығыш яһаны.

— Большевиктәр партияһы, Совет хөкүмәте һәм иптәш Сталиндең көндәлек хәстәрлеге арҡаһында, — тине докладсы, — илебеҙҙә аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары әленән-әле күберәк етештерелә. Карточка системаһы бөтөрөлгәндән һуң, массовый ҡулланыу тауарҙарына хаҡтарҙың иҫәп буйынса дүртенсе тапҡыр арзанайтылыуы совет һуммының һатып алыу һәләтлеген күтәрҙе.

1950 йылдың мартында партия һәм хөкүмәтебеҙ тарафынан государство һәм кооператив сауҙаһы работниктәренә хеҙмәт хаҡын түләүҙә яңы система билдәләнеүе, сауҙа эшен артабан яҡшыртыу һәм тауар әйләнешен йәйелдереү өсөн ыңғай шарттар тыуҙырҙы. Башҡортостанда тауар әйләнеше планы 1950 йылда 101,6 процентҡа үтәлде. Сауҙа селтәрҙәре 1949 йылға ҡарағанда байтаҡ киңәйтелде.

Ләкин ҡайһы бер ыңғай һөҙөмтәләр менән бергә сауҙа эшендә күп кенә серьез етешһеҙлектәр бар әле. Ҡайһы бер торгтар, эшселәр тәьминәте управлениелары һәм ОРС-тар тауар әйләнешен үҫтереүгә тулы мөмкинлектәре була тороп, йыллыҡ планды үтәмәнеләр. Төҙөлөш материалдары министерствоһы заводтарының ОРС-тары, Связь министерствоһы предприятиеларының эшселәр тәьминәте управлениелары, күмер промышленносе һәм төҫлө металлургия предприятиеларының ОРС-тары план үтәлешен тәьмин итмәнеләр.

Бигерәк тә Өфө ҡалаһының 1-се һәм 2-се пищеторгтары (директорҙары Омеров һәм Касьянов иптәштәр), промторг (директоры иптәш Закиров) һәм Белорет торгы йомшаҡ эшләне. Был сауҙа ойошмалары потребителдәргә миллиондарса һумлыҡ тауар биреп еткермәнеләр. Сауҙа ойошмалары сезонға ҡарата талап ителгән кейемдәрҙе үҙ ваҡытында килтермәйҙәр. Сауҙа ойошмаларының етәкселәре потребителдәрҙең үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндереүҙә йомшаҡ эшләйҙәр әле.

Культуралы совет сауҙаһын артабан йәйелдереп ебәреү, промышленность базаларының эшмәкәрлектәрен ҡырҡа яҡшыртыуҙы талап итә. Улар хеҙмәтсәндәрҙең әленән-әле үҫә барған талаптарын иҫәпкә алыу нигеҙендә сауҙа ойошмаларын кәрәкле ассортименттағы тауарҙар менән тәьмин итеп торорға саҡырылғандар. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡайһы бер базалар үҙҙәренә йөкмәтелгән был мөһим бурыстарҙы йомшаҡ үтәйҙәр. Главлегсбыт базаһының насар эшләүе һөҙөмтәһендә, сауҙа ойошмаларына бөтә төр тауарҙар буйынса ла тауар фондтары етерлек тиклем бирелмәне. Рыбсбыттың республика базаһы етәксеһе иптәш Пәмилев тә потребителдәрҙең һорауҙары менән тейешенсә ҡыҙыҡһынмай. Ул сауҙа ойошмаларына үткән йылда бик күп балыҡ һәм балыҡ изделиелары биреп еткермәне, 1951 йылдың I квартал планын да ни бары 80,5 процентҡа үтәне. Һәм хәҙер ҙә эш шәптән түгел. Бындай әҙәклектәргә юл ҡуйыу факттары башҡа промышленность базаларында ла бар.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа бөтәһе 30 кеше сығып һөйләне. Улар республика сауҙа ойошмаларының етешһеҙлектәрен астылар һәм ҡаты тәнҡитләнеләр.

Белорет ҡалаһы торгы директоры иптәш Шубин, Сауҙа министерствоһы работниктәренең урындарҙа һирәк булыуы һәм улар тарафынан сауҙа ойошмаларына практик ярҙамдың аҙ күрһәтелеүе тураһында һөйләне.

— Ишембай ҡалаһы хеҙмәтсәндәренең, — тине үҙенең сығышында Ишембай ҡала Советы исполкомы председателенең урынбаҫары иптәш Уразбаев, — буяу, олиф кеүек төрлө хужалыҡ тауарҙарына талаптары ҙур. Үкенескә ҡаршы, улар беҙҙә юҡтар. Хәҙер йәйге осор килеп етте. Ҡалала алкоголһеҙ эсемлек һыуҙары менән сауҙа итеү эше насар тора. Был етешһеҙлектәрҙе Сауҙа министерствоһы белә тороп, ошо көнгә тиклем иғтибарға алғаны юҡ әле.

Кәңәшмәлә ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш Ҡорбанғолов сығыш яһаны. Ул үҙенең сығышында сауҙа работниктәренең алдында торған конкрет бурыстарҙы билдәләне.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар сауҙа эшен яҡшыртыу буйынса конкрет саралар билдәләнеләр һәм 1951 йылдың тауар әйләнеше планын иптәш Сталин тыуған көнгә — 21 декабргә үтәргә һәм пландан тыш 75 миллион һумлыҡ тауар һатырға, 1 миллион 250 мең һум экономия яһарға социалистик йөкләмә алдылар.

А. Харисов.

Балалар йорттары работниктәренең квалификацияһын күтәреү курстары

Башҡорт АССР-ы Мәғариф министерствоһының балалар йорто управлениеһе эргәһендәге методика кабинеты быйыл йыл башынан бирле балалар йорто директорҙары, уҡыу-тәрбиә бүлеге мөдирҙәре һәм тәрбиәселәрҙең квалификацияһын күтәреү маҡсатында бер айлыҡ курстар үткәрә. Был курстарҙа ике йөҙгә яҡын кеше уҡыны. Улар унда «Марксистик диалектика һәм тарихи материализм», «Иптәш Сталиндың тел ғилеме мәсьәләләре тураһындағы хеҙмәттәре», «Академик Павловтың физиологик уҡыуы», «Педагогиканың төп мәсьәләләре», «Психологияның ҡайһы бер тармаҡтары», «Ата-әсәһеҙ ҡалған балаларҙың хоҡуҡтарын һаҡлау» тураһында һәм башҡа темаларҙа лекциялар тыңланылар.

Курсанттар баш ҡаланың музейҙарында, театрҙарында, завод һәм фабрикаларында экскурсияларҙа булдылар. Өфөнөң беренсе, бишенсе, етенсе һәм һигеҙенсе балалар йорттарында практикала булып, методик эштәр менән таныштылар.

Күптән түгел, методик кабинет эргәһендә ойошторолған шундай уҡ курстарҙы тағы ла 18 кеше тамамлап сыҡты. Хәҙер был курстар йыл әйләнәһенә эшләйәсәк.

Йәйге осорҙа балалар йорттары педагогтарының квалификацияһын күтәреү [illegible] хеҙмәт тәрбиәһе, эстетик тәрбиә, пионер һәм балалар Советтарының эштәре, уҡыу һәм уҡытыу эштәрен планлаштырыу буйынса докладтар буласаҡ, балалар менән берлектә туристик походтар ойошторласаҡ һәм башҡа саралар үткәреләсәк.

Г. Әхмәров.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 20 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе 20 апрелдә үҙ эшен дауам иттерҙе. Великобритания вәкиле Дэвис председателлек итте.

Беренсе һүҙҙе СССР вәкиле А. Громыко алды, ул үҙе тарафынан элек яһалған иҫкәртеүҙәргә өҫтәмә итеп, АҠШ, Великобритания һәм Франция делегациялары тарафынан 17 апрелдәге ултырышта тапшырылған көн тәртибенең яңы проектына ҡарата совет делегацияһының позицияһы тураһында әйтте.

— СССР делегацияһы күрһәткәненсә, — тип белдерҙе Громыко, — өс державаның яңы тәҡдиме, йәки аныҡыраҡ әйткәндә, тәҡдименең яңы редакцияһы ышаныслыраҡ булып тормай. Был яңы редакцияны тапшырыу өс держава делегацияһының көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеүен еңеләйтеүсе реаль аҙымдар яһарға уйламауын күрһәтә. Атап әйткәндә, тип күрһәтте СССР вәкиле, өс делегацияның ҡоралланыуҙар һәм ҡораллы көстәр тураһындағы мәсьәләгә ҡағылған тәҡдименең формулировкаһы бөтөнләйгә ҡәнәғәтләнмәслек булып тора. Был формулировкала төп бурысҡа — ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе **ҡыҫҡартыу** бурысына зыян яһап, ҡоралланыуҙар һәм ҡораллы көстәр **кимәле** тураһындағы мәсьәлә әлеккесә беренсе планға ҡуйыла. Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы төп бурыс ҡоралланыуҙар кимәле хаҡындағы мәсьәлә менән алмаштырыла.

Халыҡ-ара контроль урынлаштырыуға ҡағылған формулировка тураһында ла ошоно уҡ әйтергә кәрәк, тип белдерҙе Громыко. Бөтәһенән элек, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне тикшермәйенсә, контроль тураһындағы мәсьәләне ҡарарға ярамай. Тимәк, контроль тураһындағы мәсьәләне алғы планға һәм, өс держава вәкилдәре үҙҙәренең яңы проектында әйткәнсә, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне артҡы планға ҡуйырға ярамай. Контроль объектенән айырым рәүештә контроль тураһында һөйләргә ярамай. Контроль тураһындағы мәсьәлә төп мәсьәләнән, атап әйткәндә, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарауҙан элек тикшерелһә, ул йөкмәткеһеҙ, уңышһыҙ буласаҡ.

Аҙаҡ килеп, тип дауам итте СССР вәкиле, беҙ АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәренең иғтибарын беҙҙең алда, өс держава делегацияһы тәҡдим иткәнсә, **ғөмүмән**, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһында түгел, ә **дүрт держава** ҡоралланыуҙарын һәм ҡораллы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарау бурысы торғанлығына юнәлткәйнек инде. Беҙ үҙебеҙҙең фекер ҡарашыбыҙҙы яҡлап, тейешле дәлилдәр килтерҙек. Айырым алғанда, беҙ, СССР, АҠШ, Великобритания һәм Францияның сит ил эштәре министрҙәре был мәсьәлә буйынса тик дүрт державаға ҡағылған ҡарарҙар ғына ҡабул итә алалар, һәм башҡа илдәргә ҡағылған ҡарарҙар ҡабул итә алмайҙар, тип күрһәткәйнек.

Дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡораллы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса Советтар Союзының тәҡдимдәрен ҡабул итеүгә өс держава вәкилдәре ҡаршы килгән ныҡышмалылыҡ, көнбайыш державалар бөтә эште, тыныслыҡты яҡлау эше өсөн ошондай мөһим әһәмиәткә эйә булған был мәсьәләне, асылда, сериоз ҡарау урынына, был һәм йөкмәткеһеҙ һүҙҙәргә, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы декларацияларға ҡайтарып ҡалдырырға теләйҙәр, тигән һығымта яһарға нигеҙләр бирә. Был мәсьәләне тикшереү ваҡытта беҙгә ҡаршы килгән ҡыйынлыҡтар һәм шул сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының кәңәшмәһе килеп тыуған хәл өсөн яуаплылыҡ Советтар Союзына түгел, ә ошондай ҡыйынлыҡтарҙы тыуҙырыусыларҙың өҫтөнә төшәсәге бөтөнләй тә асыҡ.

— Совет делегацияһы әлеккесә, — тип белдерҙе Громыко, — ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса өс держава вәкилдәре тарафынан элек әйтелгән теләктәрҙе иҫәпкә алып, 4 апрелдә үҙе тарафынан индерелгән формулировканың көн тәртибенең был пункты буйынса килешеү өсөн уңайлы нигеҙ булып тора, тип иҫәпләй.

Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләгә күсеп, Громыко былай тине:

— Беҙ бында ла тамам килешеүгә өлгәшмәнек, сөнки көн тәртибендә был мәсьәләгә ниндәй урын бирелергә тейеш булыуы тураһында килешмәнек. Совет делегацияһы, Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәлә көн тәртибенең беренсе пунктында булған проблемалар исемлегендә беренсе урынға ҡуйылһын ине, тигән үҙ тәҡдиме менән өс держава вәкилдәре килешерҙәр, тип ышаныс белдерергә теләр ине.

Билдәле булыуынса, тип дауам итте Громыко, өс держава вәкилдәре Болгария, Венгрия һәм Румыния менән тыныслыҡ договорҙары тураһында үҙҙәре тарафынан элек көн тәртибенән кире алынған мәсьәләне көн тәртибенең үҙ проекттарына яңынан индерҙеләр. Улар тик был пункттың формулировкаһын ғына үҙгәрттеләр, уны тағы ла ҡыҫҡараҡ яһанылар, ләкин йөкмәткеһен үҙгәртмәнеләр.

Совет делегацияһы, үҙе күрһәткәненсә, был тәҡдим менән килешә алмай. Ул был тәҡдимгә үҙенең үҙгәртеүен индерҙе. Был үҙгәртеү Болгария, Венгрия һәм Румыния менән тыныслыҡ договоры һәм Италия менән тыныслыҡ договоры тураһындағы мәсьәлә генә түгел, шулай уҡ дүрт державаның Германия менән Австрияға ҡағылған килешеүҙәре тураһындағы мәсьәләне лә тикшереүҙе күҙҙә тота.

Өс держава делегацияһының был пункттың редакцияһын үҙгәртеүен иҫәпкә алып, совет делегацияһы уға индерелгән үҙенең үҙгәртеүенең редакцияһын да үҙгәртергә мөмкин, тип тапты. Совет үҙгәртеүен иҫәпкә алып, был пункттың яңы формулировкаһында былай, тип әйтеләсәк:

«Италия, Румыния, Болгария һәм Венгрия менән тыныслыҡ договорҙары; дүрт державаның Германия менән Австрияға ҡағылған килешеүҙәре».

Триестҡа ҡарата пунктҡа күсеп, СССР вәкиле былай тине:

— Һуңғы ике көн эсендә Джессеп, Пароди һәм Дэвис тарафынан яһалған белдереүҙәрҙән Италия менән тыныслыҡ договорының Триестҡа ҡағылған өлөшөн үтәү тураһындағы мәсьәләлә беҙҙең арала тамам килешеүгә өлгәшелмәгәнлеге күренә.

— Үҙенән-үҙе билдәле, — тип өҫтәне Громыко, — Австрия тураһындағы мәсьәлә лә әле булһа килешелмәйенсә ҡала.

Совет делегацияһы, тине Громыко, Атлантик пакт тураһында һәм Европаның һәм Яҡын Көнсығыштың төрлө илдәрендә Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индереүҙе тәҡдим иткәйне. Был тәҡдим ошо мәсьәләләрҙең хәҙерге халыҡ-ара хәлдә ниндәй урын тотҡанлығын иҫәпкә алып яһалғайны. Ләкин Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне ҡарауҙан баш тартыусылар был мәсьәләнең әһәмиәтен төрләсә кесерәйтергә маташтылар. Ләкин уларҙың бөтә дәлилдәре яһалма, ялған булып торалар, сөнки төрлө илдәрҙә Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләнең һәм Атлантик пакт тураһындағы мәсьәләнең, беҙҙең нисә тапҡыр күрһәтеүебеҙсә, Европалағы обстановканы яҡшыртыу һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу тураһындағы мәсьәләгә туранан-тура ҡатнашы бар. Совет делегацияһы, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне индермәгән теләһә ниндәй көн тәртибе шулай уҡ ҡәнәғәтләнерлек була алмай, тип иҫәпләй.

* * *

АҠШ вәкиле Джессеп, СССР вәкиле тарафынан яһалған иҫкәртмәләрҙең асылы буйынса һуңлабыраҡ әйтеү хоҡуҡын үҙендә ҡалдырыуын белдерҙе.

Джессеп Австрия договоры тураһындағы пунктты көн тәртибенә индереү хаҡындағы мәсьәләне СССР делегацияһының килешмәгән, тип иҫәпләүе һәм уның, йәнәһе, Италия менән тыныслыҡ договоры тураһындағы мәсьәләне ике тапҡыр тикшерергә тәҡдим итеүе айҡанлы яһалма «ғәжәпләнеү» белдерҙе.

АҠШ вәкиленә яуап биреп, Громыко, Австрия договоры тураһындағы мәсьәлә буйынса совет делегацияһының позицияһы әлекке ултырыштарҙа етерлек тиклем ентекле әйтелгәйне инде, һәм шуға күрә был мәсьәләгә яңынан ҡайтыуҙың кәрәге юҡ, тип Джессептең хәтеренә тағы ла бер тапҡыр төшөрҙө. Бынан тыш, Триест тураһындағы мәсьәлә, тип белдерҙе СССР вәкиле, бер нисә йыл буйына айырым мәсьәлә сифатында ҡуйылып килә. Тимәк, тип билдәләне Громыко, Италия менән тыныслыҡ договорының Триестҡа ҡағылған өлөшөн үтәү тураһындағы мәсьәләнең айырым әһәмиәткә эйә булыуы күптән инде, шул иҫәптән дүрт держава хөкүмәттәре тарафынан да танылды.

СССР делегацияһы шулай уҡ көнбайыш державалар хөкүмәттәренең Триестҡа ҡарата, атап әйткәндә, Триестың губернаторын билдәләү тураһындағы мәсьәлә буйынса йөкләмәләрҙе тупаҫ боҙоуҙары айҡанлы Триест тураһындағы мәсьәләне тикшереүҙең күптән кәрәкле булыуын да иғтибарға ала. Триест тураһындағы мәсьәләне, бигерәк тә, уның Англия-Американың хәрби базаһына законһыҙ әйләндерелеүе фактын иҫәпкә алып, яйға һалыуҙы артабан һуңлатыу юл ҡуйылғыһыҙ булып тора. Быларҙың бөтәһе лә СССР делегацияһына был мәсьәләне көн тәртибенең айырым, ирекле пункты сифатында ҡуйырға нигеҙләктәр бирә.

Дэвис һәм Пароди өс делегация тарафынан индерелгән көн тәртибенең яңы проектына ҡарата СССР вәкиле тарафынан 20 апрелдә яһалған иҫкәртеүҙәрҙең асылы буйынса һуңлабыраҡ әйтәсәктәрен белдерҙеләр.

СССР-ҙың ДҮРТЕНСЕ (ҺУҒЫШ... ҺУҢҒЫ БЕРЕНСЕ) БИШ ЙЫЛ... ПЛАНЫНЫҢ ҮТӘЛЕШ ЙОМҒАҠТА... ТУРАҺЫНДАҒЫ БЕЛДЕРЕҮГӘ С... ИЛДӘРҘӘГЕ

ОТКЛИКТӘР

ҠЫТАЙ ХАЛЫҠ РЕСПУБЛИКА...

ПЕКИН, 20 апрель. (ТАСС). «...жэньминь жибао» газетаһы СССР-ҙың дү... (һуғыштан һуңғы беренсе) биш й... планының үтәлеш йомғаҡтары тур... да СССР Государство план комиссияһы... СССР Үҙәк Статистика Управлениеһы... дереүенең тулы текстын баҫып сығ...

Тяньцзинда сығыусы «Тяньцзинь ...» газетаһы был Белдереүҙең текстын ... уҡ беренсе биттә баҫып сығарған.

ЧЕХОСЛОВАКИЯ

ПРАГА, 20 апрель. (ТАСС). Һуғыш... һуңғы беренсе биш йыллыҡ планы... ғынан алда үтәгән совет халҡының ... некле еңеүе Чехословакия хеҙмәтсән... нең иғтибар үҙәгендә ҡалыуҙа дау...

«Лидове новины» газетаһы 20 ... дәге баш мәҡәләһендә ошоларҙы ... «1946 йылдың 9 февралендә Мәс... лаһының Сталин һайлау округы һа... сыларының һайлау алды йыйылыш... һөйләгән тарихи телмәрендә И. В. С... совет халҡына Совет государствоһы... үҫеше яңы үҫеүенә, коммунизм ... юл күрһәтте. И. В. Сталин тараф... күрһәтелгән һәм 1946—1950 йыл... СССР халыҡ хужалығын ҙурыраҡ баҫ... һәм үҫтереүҙең биш йыллыҡ планы т... һындағы законның статьяларында ... ләндерелгән гүзәл киләсәктең перспек... валары реаль ысынбарлыҡҡа әйлән...

Совет халҡы һуғыштан һуңғы бере... биш йыллыҡ планды дүрт йыл һәм ... ай эсендә үтәне.

Һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллы... ты срогынан алда үтәүе менән совет хал... ҡы социалистик Тыуған илгә ... сикһеҙ бирелгәнлеген тағы ла бер та... ҡыр иҫбатланы һәм тыныслыҡты ни... ты. СССР-ҙың һуғыштан һуңғы бере... биш йыллыҡ бурыстарының тулыһын... һәм арттырып үтәлеүе социалистик хуж... лыҡтың иксез-сикһеҙ мөмкинлектәрен ... һатте».

УРУГВАЙ

МОНТЕВИДЕО. 20 апрель. (ТАСС) «Верҙад» газетаһы Советтар Союзын... 1946 — 1950 йылдарҙағы дүртенсе (һу... ғыштан һуңғы беренсе) биш йыл... планды срогынан алда үтәүенә арнал... редакцион мәҡәлә баҫып сығарҙы. Г... зета, биш йыллыҡ план билдәләнгән... сроктан 9 ай элек үтәлгән, тип һыҙ... өҫтәнә ала. «Социалистик Тыуған ил... тыныслыҡ һәм төҙөлөш политикаһын... яңы ғәйәт ҙур уңышы ул».

Империалистик лагерь илдәрендә, т... дауам итә газета, хәрби бюджеттар ... ҡап һәм эшһеҙлек үҫкән, промышлен... ность производствоһы кәмегән, бере... наубатта кәрәк булған товарҙар хаҡы... ҡыйбатланған һәм хеҙмәтсәндәрҙең т... насарайған бер ваҡытта — Совет... Союзында биш йыллыҡ планың ср... ғынан алда үтәлеүе Социалистик гос... дарствоның ҡеүәтен яңы иҫбатлау һ... хеҙмәтсәндәрҙең хәлен яҡшыртыуға ... ре ҡағылмаҫлыҡ иҫбатлауы булып т...

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 20 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 20 апрелдә ошоларҙы хәбәр итте:

Англия-Америка интервенциониҫт ғәскәрҙәре, йәнле көстә һәм техникала юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, 38-се параллелдән төньяҡтараҡ алға барыуҙы дауам иттерәләр һәм фронттың айырым участкаларында 38-се параллелдән төньяҡта 25 километрға алға киттеләр.

Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтарының отрядтары менән берлектә оборона һуғышын алып барыуҙы дауам иттерәләр.

Үҙәк фронтта 19 апрелдә дошмандың 8 самолеты атып төшөрөлдө.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

И. В. Сталиндең башҡорт теленә тәржемә ителгән 16 томлыҡ әҫәрҙәренә

Книготорг магазиндәре һәм „Союзпечать“ бүлектәре тарафынан подписка ҡабул ителә.

Беренсе том 1951 йылдың апрель айында баҫылып сығасаҡ.

Башҡорт АССР-ының Книготорғы.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

КӨНБАҒЫШТЫ СИЛОС ӨСӨН ВИКАҒА ҠУШЫП СӘСЕҮ

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың үҫә барған общественный малсылығы ныҡ аҙыҡ базаһы булдырыуҙы талап итә. Мал өсөн һутлы аҙыҡ етештереүҙе, айырыуса силос әҙерләүҙе арттырыу был эштә ҙур әһәмиәт тота.

Ҡышҡы осорҙа малдарҙы ашатыу рационында силос һутлы аҙыҡтарҙың төп өлөшөн алып торорға тейеш. Силосты һәр бер һыйыр өсөн кәмендә 5-6 тонна әҙерләргә кәрәк. Һарыҡтар һәм сусҡалар өсөн, шулай уҡ йылҡы малдары өсөн дә силос файҙалы аҙыҡ булып иҫәпләнә.

Республикабыҙҙың колхоздары һәм совхоздары былайса силосты нигеҙҙә ҡырағай үләндәрҙән әҙерләнеләр. Хәҙер бөтә булдырҙы үҙләштереү һәм уларҙы һөрөү үткәреү айҡанлы силосты культуралы үләндәрҙән әҙерләү мөмкинлеге тыуҙы һәм был маҡсатта силос культуралары сәсеү йылдан-йыл арттырылырға тейеш.

Силостың сифаты үҫемлектәрҙең төрҙәренә ҡарай. Аҡһым матдәләре күп булған үҫемлектәрҙән яһалған силос иң яҡшы аҙыҡ була. Башҡортостанда силос өсөн көнбағыш үҫтерелә. Ләкин уның силосы уртаса сифатлы була.

Донник вика менән һоло һәм вика менән көнбағыш үҫемлектәре ҡатнашмаһынан иң яҡшы сифатлы силос әҙерләргә мөмкин. Быларҙың тәүге икәүһе Башҡортостандың күпселек районларында силос массаһы буйынса юғары урожай бирмәй. Донник үләндәренән силос яһауҙы республиканың ҡоролоҡло ялан районларында, ә вика менән һоло ҡатнашмаһынан силос яһауҙы төньяҡ-көнсығыш һәм тау-урман районларҙа ғына ҡуллавырға ярай. Башҡортостандың башҡа бөтә районларында силосты көнбағыш менән вика үләндәре ҡатнашмаһынан әҙерләргә кәрәк. Бындай силоста аҡһым матдәһе, яңғыҙ көнбағыштыҡына сағыштырғанда, ике тапҡырға күп һәм уны бөтә төр малдарға, шул иҫәптән сусҡаларға һәм йәш малдарға, ашатырға мөмкин.

Башҡортостан малсылыҡ тәжрибә станцияһында үткәрелгән тәжрибәләр бындай ҡушымтаның иң яҡшы силос культураһы булыуын күрһәтте. Көнбағыш менән вика ҡушымтаһын сәсеү һәм унан силос яһау эше хәҙер инде Өфө ҡалаһы яңы хужалыҡтарында һәм Өфө, Иглин, Архангель райондарында ҡулланыла башланы. 1950 йылда бындай ҡушымталар Дәүләкән районы колхоздарында ла сәселде.

Көнбағышты вика менән ҡушып сәсеү мичуринсе совет биология фәненә нигеҙләнгән. Көнбағыш менән вика үләненең тамырҙары тупраҡта төрлө ҡатламда урынлашалар, аҙыҡты икеһе ике төрлө ала. Шулай итеп, улар аҙыҡланыуҙа береһе икенсеһенә һис бер ҡамасауламай, хатта, киреһенсә, береһе-береһенә ярҙамлаша.

Көнбағыш—пропаш культура. Яңғыҙ үҙе генә ул киң рәтлә итеп сәселә һәм уны тәрбиәләүҙә күп хеҙмәт һалыу талап ителә. Уның рәт араларын эшкәртергә, ҡый үләндәрен утарға, һирәкләргә кәрәк була. Шундай итеп тәрбиәләмәгәндә уны ҡый үләндәре баҫып китәләр һәм көнбағышҡа үҫергә ирек бирмәйҙәр.

Әгәр ҙә көнбағышты викаға ҡушып сәскәндә, һис бер тәрбиәләү талап ителмәй. Ҡушып сәселгән көнбағыш һәм вика бер үк ваҡытта шытып сығалар. Ҡайһы бер саҡта вика үләне иртәрәк тә шыта. Уның үләне көнбағыш һабаҡтарына йәбешеп үҫә, ләкин уға ҡамасауламай. Бындай ҡушымта бик тиҙ үҫә һәм тупраҡты күләгәләй. Был ҡый үләндәренә үҫергә ирек бирмәй.

Башҡортостан малсылыҡ тәжрибәһе станцияһында 1947—1950 йылдарҙа үткәрелгән тәжрибәләр һәр гектарҙан центнерҙарҙа урожай алыуҙы түбәндәгесә күрһәтте: көнбағыштың үҙен генә сәскәндә һәм ашлама индермәгәндә һәр гектарҙан 208,9 центнер, ә ашлама индергәндә — 300,2 центнер, көнбағышты вика менән ҡушып сәскәндә һәм ашлама индермәгәндә һәр гектарҙан 190,7 центнер, ә ашлама индергәндә 306,5 центнер урожай алынды. Бында көнбағышты үҙен генә сәскән участкала бөтә тәрбиәләү саралары үткәрелде—рәт араларында тупраҡ эшкәртелде, ҡый үләндәре уталды һәм рәттәрҙә һирәкләү үткәрелде.

Ашлама индерелмәгән ярлы тупраҡта, аҙыҡланыу насар шарттарҙа килгәндә көнбағыш менән вика ҡушымтаһы урожайы, көнбағышты үҙен генә киң рәтле итеп сәсеүгә сағыштырғанда, түбәнерәк була. Әгәр ҙә бында тәрбиәләү өсөн көс һалынмауын иҫәпкә алһаҡ, көнбағыш менән вика ҡушымтаһынан юғары урожай алыныуын бик яҡшы аңларға мөмкин.

Ашлама индерелгән ерҙә көнбағыш менән вика ҡушымтаһының урожайы, хатта яҡшы тәрбиә бирелгән яңғыҙ сәселгән көнбағыш урожайынан юғары була.

Көнбағыш менән вика ҡушымтаһының, көнбағышты яңғыҙ үҙен генә сәсеүгә ҡарағанда, өҫтөнлөгө шунда: ҡушымта иң яҡшы силос массаһын бирә. Уны сабып алыуы еңел. Ташыу өсөн уңайлы. Еңел турала һәм силос соҡоронда тиҙ тығыҙлана.

Көнбағыш менән вика ҡушымтаһы бөртөклө иртә культуралар бер үк ваҡытта сәселә. Сәсеүҙә арҡыры-буй ысул ҡулланыла. Тәүҙә, сәскестәге бер сошник аша, 26—30 сантиметр ара ҡалдырып, көнбағыш сәселә, ә унан һуң шул уҡ көндә йәки иртәгеһенән дә һуңға ҡалдырмайынса, сәскесте арҡырыға йөрөтөп, бөтә сошниктәр менән тотош вика сәселә. Орлоҡ 4—6 сантиметр тәрәнлектә күмелелә.

Көнбағыш-вика ҡушымтаһын сәсеүҙә төп агротехник талап дөрөҫ сәсеү нормаһын ныҡ һаҡлауҙа тора. Көнбағыш нормаһын күп сәселһә, ул викаға үҫергә ҡамасаулай. Был силос массаһының насар сифатлы булыуына алып бара. Ә виканы норманан тыш сәскәндә, ул көнбағышҡа үҫергә ҡамасаулай. Көнбағыш һабаҡтары бик нәҙек була һәм бындай нәҙек һабаҡтар уға үрмәләгән вика үләндәренең ауырлығын күтәрә алмайҙар, йығылалар.

Һәр бер квадрат метр майҙанға 20—25 дана көнбағыш һәм 120—150 дана вика орлоғо сәселгән ҡушымта яҡшы булып үҫә. Беренсе класлы орлоҡтар сәскәндә һәр бер гектарға 15 — 20 килограмм көнбағыш һәм 75—100 килограмм вика китә. Әгәр орлоҡтар ваҡ булһа, улар кәмерәк ауырлыҡта сәселә. Әгәр орлоҡтар эре һәм ауыр булһа, сәсеү нормаһы ауырлығы арта.

Ҡушымтаны силос өсөн сабыу көнбағыш сәскә атыуҙан алда үткәрелә. Был осорҙа вика үләндәре теймәләнә башлаған була. Улар урғыстар, лобогрейкалар, бесән салҡыстар, шулай уҡ ҡул салғылары менән сабылалар.

Беҙҙең социалистик ауыл хужалығы алдынғылары фәндең бөтә ҡаҙаныштарын ҡулланалар. Колхоздар һәм совхоздар производствоны яҡшыртыуға ярҙам иткән бөтә ысулдарҙы үҙләштерергә тейештәр. Беҙ шулай уҡ мал аҙыҡтары әҙерләүҙә яңы ҡаҙаныштарҙы файҙаланырға тейешбеҙ.

Республикабыҙ колхоздары һәм совхоздары алдында мал аҙығы әҙерләүҙе арттырыу, уның сифатын яҡшыртыу, силос культураларын сәсеүҙе киңәйтеү бурыстары тора. Башҡортостан колхоздары силос культуралары итеп көнбағышҡа үлән ҡушып сәсергә, мал ашатыуҙы яҡшыртырға, общественный малсылыҡтың продукт биреүсәнлеген күтәрергә бурыслылар.

С. Умов,
ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

ПО 1943 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.
1951 йыл
№ 80 (8797)
24 апрель
шишәмбе
Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ВКП(б) ӨЛКӘ КОМИТЕТЕНДӘ. БАССР колхоздарында һәм совхоздарында мал аҙыҡтары культураларын сәсеүҙең, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыуҙың барышы тураһында (1-се бит).
БАҪЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ. Б. Һунаҡбаев. — Трактористәр смена заданиеләрен арттырып үтәйҙәр (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Р. Әхмәдиев. — Пропагандистәр менән эшләү (2-се бит).
М. Соловьев. — Общественный малсылыҡты күтәрелештә (2-се бит).
Д. Әхмәров. — РСДРП-ның IV (Берләштереү) съезы (2-се бит).
ПРОИЗВОДСТВОЛА СИФАТ КҮРҺӘТКЕСТӘРЕН ЯҠШЫРТАЙЫҠ. Т. Тарасевич. — Продукцияның түбән тошоу хаҡын кәметеү — предприятиеләр накопленпенең нигеҙе (2-се бит).
«БАҪЫУ ЭШТӘРЕНДӘ УРОЖАЙҘЫ КҮТӘРЕҮҘЕҢ БӨТӘ РЕЗЕРВТӘРЕН ФАЙҘАЛАНАЙЫҠ. М. Сәләхов. — Фән өлгәшеүҙәрен производствола киң ҡулланайыҡ (3-сө бит).
Н. Саламатин. — Тупраҡты сәсеү алдынан эшкәртеүгә ныҡлы иғтибар (3-сө бит).
АУЫЛ СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ ТРИБУНАҺЫ. М. Әхмәтшин. — Масса — ауыл Советының төп терәге (3-сө бит).
Н. Зубов. — Адмирал Лазарев (3-сө бит).
Ғариф Ғүмәр. — Тыныслыҡ өсөн (4-се бит).
Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Культура-ағартыу учреждениеләренең мөһим бурыстары

Колхоз ауылдары, совхоздар, машина-трактор станциялары яҙғы баҫыу эштәрен башланылар. Социалистик ауыл хужалығының бөтә ҡеүәтле техникаһы, совет агробиология фәне тәҡдимдәре юғары урожай үстереүгә өлгәшкән ауыл хужалығы эшсәндәре һәм специалистәре баҫыуҙарға сыҡтылар. Ауыл хужалығы йылының тәүге һәм мөһим этаптарының береһе башланды. Партия тарафынан илебеҙҙең ауыл хужалығы алдына иген етештереүҙе, уҙған йылдағы валовой йыйымдан байтаҡ арттырып, мул урожай алыу бурысы ҡуйылды. Был боевой бурысты үтәү өсөн чәсәү эштәрен уңышлы тамамланыуы яҙғы сәсеүҙе ниндәй агротехник кимәлдә үткәреүгә бәйләнгән.

Партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының бурысы хәҙер — ауыл хужалығы йылының бөтә эштәрен аныҡ план нигеҙендә алып барыуҙы тәьмин итеүҙә, государство пландарының әҙмәлекле үтәлеүенә өлгәшеүҙә, массалар эшен уның эштәренә оператив етәкселек итеүҙә, уларҙы алда торған бурыстарҙы үтәү тирәһенә туплауҙан тора.

Тәге йәки был хужалыҡ кампанияһының уңышлы үтәлеүе, билдәле булыуынса, тап бына ошо шартҡа — кешеләрҙең үҙ бурыстарҙы үтәүгә ниндәй күләмдә мобилизациялыуынан, уларҙың үҙҙәре башҡарасаҡ эштәрҙең әһәмиәтен тәрән аңлауҙарынан килә. Ошо айҡанлы хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эш алып барыуға саҡырылған культура-ағартыу учреждениеләренә мөһим бурыстар йөкмәтелгән.

Бөгөн көнө клубтар, уҡыу өйҙәре, район культура йорттары колхозсылар, МТС һәм совхоз эшсәләре, ауыл хужалығы специалистәре араһында партияның һәм хөкүмәттең политикаһын аңлатыу, уларҙы ошо бурыстарҙы үтәү тирәһенә туплау буйынса планлы эш алып барала.

Яҙғы баҫыу эштәре башланыу айҡанлы культура-ағартыу учреждениеләре эшләренең эштәрен туранан-тура производство урындарына: баҫыу стандарына, трактор бригадаларына күсерәләр. Хәҙер район буйынса, һәр бер район библиотекаһын фондынан колхоздарҙы хеҙмәтләндереү өсөн кәмендә унар күсмә библиотека, ә бригадаларҙы хеҙмәтләндереү өсөн колхоз библиотекаларынан 3 — 5-әр күсмә библиотека ойошторола.

Иглин районының культура-ағартыу учреждениеләре, мәҫәлән, яҙғы баҫыу эштәре өсөрөн план нигеҙендә эшләү менән ҡаршыланылар. Колхозсылар һәм механизаторҙар араһында беседалар үткәреү, ҡыҫҡырын газета уҡыуҙы даими ойоштороу менән бер рәттән, клубтарҙың, уҡыу өйҙәренең художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәре яҙғы баҫыу эштәре ваҡытында һәр ҡайһыһы баҫыу станларында дүртәр тапҡыр сығыш яһарға тейештәр. Бынан башҡа колхоз ауылында эшләп үҙәгендә булған культура көстәре иҫәпкә. Район культура йорто артаһынан ойошторолған агиткультбригада постановка һәм концерт программалары менән 15 көн буйына колхоздарҙа буласаҡ. Һәр билдәләнгән ошо саралар практик тормошҡа ашырыла башланы.

Ҡырмыҫҡалы районының клубтары һәм уҡыу өйҙәре лә яҙғы баҫыу эштәре өсөрөн яҡшы әҙерлек менән ҡаршыланылар.

Әлбиттә, культура-ағартыу учреждениеләре, яҙғы сәсеү кеүек мөһим хужалыҡ-политик кампанияны үткәреү осорында уларҙың эштәренә үҙ ваҡытында тейешле иғәлеш биргәндә генә һәм кәрәкле ярҙам ойошторғанда ғына, үҙҙәренең алдарынан ҡуйылаған талаптарҙы уңышлы итеп үтәй аласаҡтар. Ләкин әле күп кенә урындарҙа клубтарҙың һәм уҡыу өйҙәренең эштәренә тейешле иғтибар бирелмәй. Быға миҫал итеп, Покровка районын килтерергә мөмкин. Унда партия, совет ойошмалары был мөһим участкаһын эшен баһалап еткермәйҙәр. Районда клуб һәм уҡыу өйҙәре эргәһендә бер генә түңәрәк тә эшләмәй. Лекциялар уҡыу планы бик аҙға ғына үтәлгән. Уҡылған лекцияларҙың да сифаты түбән. 5 клуб, 6 уҡыу өйө, 3 библиотеканың бинаһы юҡ, улар ҡайҙа тура килһә, шунда урынлаштырылған.

Бюджетта ҡаралған аҡса средстволарын үҙ урындарында файҙаланмайынса, һәр төрлө хужалыҡ маҡсаттарында тоталар. Районда китаптар фонды ҙур түгел, баҫыуға алып сығыу өсөн китаптар, культура-музыка ҡоралдары, уйын әйберҙәре етешмәй. Районың Ҡалтай ауылында, мәҫәлән, шулай булған: ауыл уҡыу өйө өсөн китаптар һәм башҡа кәрәк-яраҡтар алыуға бүленгән 2 мең һум аҡсаның 1300 һумын ауыл Советы бинаһын ремонтлауға файҙаланғандар. 100 һумына фураж һатып алғандар һәм башҡалар.

Культура-ағартыу учреждениеләре өсөн бүленгән аҡса суммаларының билдәләнгән урындарына ғына тотолоуына өлгәшергә, бында аҙ ғына ла боҙоуҙарға юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Халҡыбыҙҙың культура-тормош кимәле һаман үҫә бара, шуның менән бергә, уларҙың культура-ағартыу учреждениеләренә ҡарата булған талаптары ла арта һәм бурыс законлы талапты үтәүҙе тәьмин итеүҙән тора.

Социалистик ауыл хужалығында юғары урожай өсөн көрәштең тәүге этабында колхоз ауылы эшсәндәрен культуралы хеҙмәтләндереүҙе әлгелә итеп ойоштороуға өлгәшергә кәрәк. Бөтә эштең нигеҙендә партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарын, ауыл хужалығы белемдәрен, шулай уҡ ауыл хужалығы алдынғыларының был өлкәләге тәжрибәләрен киң пропагандалау, колхозсыларҙы, механизаторҙар кадрҙарын яҙғы сәсеүҙе максималь ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә туплау, бөтә культураларҙан да мул урожай алыу өсөн көрәш мәсьәләһе торорға тейеш. Быны тормошҡа ашырыу өсөн колхоз, МТС активтарен, ауыл интеллигенцияһын, район үҙәктәренең культура көстәрен киң ылыҡтырырға кәрәк.

Баҫыу эшсәндәренең яҙы культуралы итеп үткәрелергә һәм культуралы ял хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү өсөн булышлыҡ итергә тейеш. Көндәлек эштәргә стена газеталары, боевой листоктар аша йомғаҡ яһай барыу, алдынғыларҙы һәм эштә артта ҡалыусыларҙы үҙ ваҡытында күрһәтеү, уңышлы эш өлгөләрен таратып, дөйөм күтәрелешкә өлгәшеү, социалистик ярыштың киң йәйелдереү иғтибар үҙәгендә торорға тейеш.

Китап менән эш итеүгә айырата әһәмиәт биреү талап ителә. Колхоз производствоһына яҡын булған китаптар буйынса конференциялар үткәреү, ундағы геройҙар тураһында фекер алышыу, шулай уҡ яҡшы һөҙөмтәләр бирер ине.

Культура-ағартыу учреждениеләренең бөтә көстәрен һәм эшмәкәрлектәрен баҫыуға — игенселәрҙе һәм механизаторҙарҙы хеҙмәтләндереүгә йүнәлтергә! Клубтар, уҡыу өйҙәре һәм культура йорттары работниктәре алдында торған бөгөнгө мөһим бурыс бына ошондай.

ӨФӨ ҠАЛА ПАРТКОНФЕРЕНЦИЯҺЫ ДЕЛЕГАТТАРЫ ИҒТИБАРЫНА

Өфө ҡала партконференцияһы 1951 йыл 25 апрелдә көндөҙгө 12 сәғәттә Рус драма театры бинаһында (Гоголь урамы, 58-се номерлы йорт) асыла.

ВКП(б)-НЫҢ ӨФӨ ҠАЛА КОМИТЕТЕ.

ВКП(б) Өлкә комитетендә

БАССР колхоздарында һәм совхоздарында мал аҙыҡтары культураларын сәсеүҙең, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыуҙың барышы тураһында

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа мал аҙыҡтарын етештереү эшен тамырынан яҡшыртыу тураһында бер нисә тапҡыр күрһәтеүҙәргә ҡарамаҫтан, партияның ҡайһы бер райкомдары, район Советтары исполкомдары, район ауыл хужалығы бүлектәре һәм машина-трактор станцияларының директорҙары мал аҙыҡтары культураларын сәсеүгә һәм урожайлылығын күтәреүгә яуапһыҙ ҡарайҙар, тип билдәләне.

Колхоздарҙа күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу планы ошо йылдың 20 апреленә 15,5 процентка ғына һәм тырматыу планы 17 процентка ғына үтәлгән. Воскресен, Ғафури, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Шишмә, Благовещен, Учалы һәм Куюрғазы райондары күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуға әле булһа башламағандар.

Туймазы, Бишбүләк, Көйөргәҙе, Бүҙәк, Ауырғазы, Миәкә, Федоровка һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың колхоздары үткән йылғы хаталарҙы ҡабатлайҙар, мал аҙығы культураларын сәсеүҙе һуҙалар, ә партия райкомдары һәм район Советтары исполкомдары был зарарлы практикаға юл ҡуялар һәм бөтә мал аҙығы культураларын сәсеүҙе үҙ ваҡытында үткәреүгә кәрәкле сараларҙы күрмәйҙәр.

Ташлы күл МТС-ының директоры иптәш Пашкин, Бүҙәк МТС-ының — иптәш Корепанов, Ташлы МТС-ының — иптәш Дауытов һәм Стәрлетамаҡ МТС-ының директоры вазифаһын үтәүсе иптәш Ромов колхоздарҙа мал аҙығы культураларын тракторҙар менән сәсеү планын үтәүгә яуапһыҙ ҡарайҙар, ә республиканың Ауыл хужалығы министерствоһы МТС етәкселәренең бындай мөнәсәбәте менән килешеп йәшәй һәм уларҙы колхоздарҙа мал аҙығы культураларын сәсеү планын иң яҡшы агротехник срокта үтәүҙе тәьмин итергә мәжбүр итмәй.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы ҡайһы бер колхоздар, совхоздар һәм машина-трактор станцияларының етәкселәре партия райкомдарының, район Советтары исполкомдарының һәм республика Ауыл хужалығы министерствоһының юл ҡуйыуы арҡаһында болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса иң мөһим сараларға иғтибар бирмәйҙәр, аҡас төпләүҙе, ҡыуаҡлыҡтарҙы таҙартыуҙы, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе тырматыуҙы һәм дискалауҙы үткәрмәйҙәр, тип билдәләне. Дүртөйлө, Иләш, Мәләүез, Борай, Ҡырмыҫҡалы, Куюрғазы, Саҡмағош, Шишмә, Өфө, Иглин, Архангель, Яңауыл райондарының колхоздары болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса саралар үткәреүгә башламағандар ҙа әле һәм был эштәрҙе үтәү өсөн иң яҡшы сроктарҙы юғалталар.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы күп кенә колхоздарҙа мал аҙығы етештереү бригадаларының булмауы, мал аҙығын ҡәнәғәтләнмәҫлек етештереү сәбәптәренең береһе булып тора, шуға күрә мал аҙығы культураларын сәсеүгә һәм уларҙы тәрбиәләүгә, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыуға иғтибар бирелмәй, тип билдәләне.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы ҡарар итте:

1. Республика колхоздарында һәм совхоздарында мал аҙығы культураларын сәсеү, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса эштең торошон сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәҫлек, тип табырға.

Республика Ауыл хужалығы министерствоһын, совхоздар трестарын, партия райкомдарының беренсе секретарҙарын, район Советтары исполкомдары председателдәрен, МТС һәм совхоздар директорҙарын килеп тыуған хәлде төҙәтеү буйынса ашығыс саралар күрергә һәм мал аҙығы культураларын сәсеү, болондар һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыуҙың государство планын һәр бер колхоздың һәм совхоздың үҙ ваҡытында үтәүен тәьмин итергә мәжбүр итергә. Был маҡсаттарҙа:

а) «Главзаготсортзерно», «Заготзерно», Башсоюз, «Сортсемовощь» складыларынан бөтә мал аҙығы культураларының орлоҡтарын колхоздарҙың һәм совхоздарҙың һис кисекмәҫтән алыуын ойошторорға һәм был эште ошо йылдың 26 апрелендә тамамларға.

Нәбиуллин, Черепенин һәм Назаров иптәштәргә ҡарарҙың был пунктының үтәлешен күҙәтеүҙе тапшырырға;

б) колхоздарҙа һәм совхоздарҙа күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡ үләндәр, донник, эспарцет, вика, көнбағыш һәм силос өсөн кукуруза, могара, судан үләне һәм бөтә тамыр аҙыҡтарын сәсеүҙе бөтә урындарҙа ла 1951 йылдың 1 майына тамамлау өсөн мал аҙығы культураларын массовый сәсеүҙе йәйелдерергә.

Республика Ауыл хужалығы министерствоһына мал аҙығы культураларын тракторҙар менән сәсеү планын үҙ ваҡытында үтәүҙе әҙеүсе МТС директорҙарын ҡаты яуапҡа тарттырырға ҡушырға;

в) күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы һәм тырматыуҙы республиканың бөтә райондарында ла яҡын көндәрҙә тамамлау өсөн был эште ҡыҙыу көсәйтергә.

Ауыл хужалығы министры иптәш Нәбиуллинде һәм совхоздар трестары директорҙары Ғилуанов, Фоломеев иптәштәрҙе ҡарарҙың был пунктын үтәү тураһында ошо йылдың 30 апрелендә партия Өлкә Комитетына белдерергә мәжбүр итергә;

г) болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыуҙың государство планын үтәү эшен һәр бер колхозда, совхозда һәм һәр бер машина-трактор станцияһында һис кисекмәҫтән тәртипкә килтерергә һәм государство планы менән күҙҙә тотолған бөтә агротехник сараларҙы үҙ ваҡытында үтәүҙе тәьмин итергә.

Район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәрен һәм МТС директорҙарын колхоздарҙа болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса бөтә сараларҙы үҙ ваҡытында үткәреү өсөн уларҙың персональ яуаплы булыуҙары тураһында иҫкәртеп ҡуйырға.

2. Партия райкомдарын колхоздарҙа һәм совхоздарҙа мал аҙығы культураларын сәсеүҙең государство планын үтәүгә һәм болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса сараларҙы үткәреүгә МТС, совхоздар һәм ауыл хужалығы бүлектәре етәкселәренең яуапһыҙ ҡарашын ҡырҡа бөтөрөргә мәжбүр итергә.

3. Партия райкомдарын һәм район Советтары исполкомдарын бөтә колхоздарҙа ла мал аҙығы етештереү буйынса бригадаларҙың эшен һис кисекмәҫтән тикшерергә, уларға колхозсыларҙың даими составын, эш малын, ауыл хужалығы инвентарен, машиналарҙы беркетеүҙе һәм бөтә йылға производство заданиеһен был бригадаларға еткереүҙе тәьмин итергә мәжбүр итергә.

В. И. Лениндең тыуыуына 81 йыл тулыуға ҡарата

Мәскәү хеҙмәтсәндәре бөтә совет халҡы менән бергә кешелектең бөйөк генийе, большевиктар партияһының һәм донъяла тәүге беренсе социалистик государствоның ижадсыһы һәм юлбашсыһы Владимир Ильич Лениндең тыуыуына 81 йыл тулыуҙы билдәләп үттеләр. Тыуған илебеҙ баш ҡалаһының предприятиеләрендә, учреждениеләрендә, уҡыу йорттарында Владимир Ильичтең тормошона һәм революцион эшмәкәрлегенә, В. И. Лениндең И. В. Сталин менән бөйөк хеҙмәттәшлегенә арналған беседалар, лекциялар һәм докладтар булды.

22 апрелдә В. И. Ленин Үҙәк музейенең залдарында 5 мең самаһы кеше булды.

Баш ҡаланың меңәрләгән хеҙмәтсәндәре Государстволың Третьяковский галереяһында булдылар. 1950 йылғы бөтә союз художестволы күргәҙмә урынлаштырылған залдарҙа халыҡ айырыуса күп булды. Бында большевиктар партияһының һәм совет халҡының бөйөк юлбашсылары В. И. Ленин һәм И. В. Сталин образдарын мәңгеләштергән гүзәл полотнолар бик күп.

(ТАСС).

Революция генийенең тыуған көнөн билдәләнеләр

Черниковск ҡалаһының хеҙмәтсәндәре В. И. Лениндең тыуыуына 81 йыл тулыу көнөн киң рәүештә билдәләнеләр.

Библиотекаларҙа, парткабинеттарҙа һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙә бөйөк Лениндең эшен һәм тормош юлын күрһәткән фото күргәҙмәләр, Ленин әҫәрҙәренән торған витриналар ойошторолдо. Предприятиеләрҙә агитаторҙар Ленин тураһында беседалар уҙғарҙылар. 21 апрель көндә ҡаланың бөтә предприятиеләрендә һәм учреждениеләрендә лә, «Лениндең тыуыуына 81 йыл» тигән темаға лекциялар һәм докладтар уҙғарылды.

Нефть эшкәртеү заводының бөтә цехтарында ла агитколлективтарҙың етәкселәре Лениндең тыуған көнөнә арналған доклад менән сығыш яһанылар. Заводта был темаға бөтәһе 21 доклад һәм лекция уҡылды.

«Ударник» клубында йәштәрҙең бөйөк Ленинде иҫкә алыуға арналған тематик кисәһе уҙғарылды. Бында ВКП(б) ҡала комитетының консультанты иптәш Пирогова «Ленин һәм Сталиндең бөйөк дуҫлығы» тигән темаға доклад менән сығыш яһаны.

Клубта бер нисә көн буйына В. И. Лениндең үлеүенә 27 йыл тулыуына арналған траур ултырышында иптәш Пасңелөнтың докладына буйынса кинохроника журналы күрһәтелде.

М. Мостафин.

Докладтар, беседалар

Белорет ҡалаһында Лениндең тыуыуына 81 йыл тулыуға ҡарата күп массовый саралар үткәрелде. Металлургия, ҡорос-сыбыҡ заводтарының бөтә цехтарында бөйөк даһиҙең тормош юлы һәм эшмәкәрлеге тураһында беседалар, докладтар булды.

Район библиотекаһында В. И. Лениндең тормошона арнап бай витрина ойошторолдо.

А. Кошкин.

Баҫыу эштәре көндәлеге

ТРАКТОРИСТӘР СМЕНА ЗАДАНИЕЛӘРЕН АРТТЫРЫП ҮТӘЙҘӘР

Баймаҡ МТС-ының иптәш Файзулла Бикколов етәкселек иткән трактор бригадаһы Ленин исемендәге колхозды хеҙмәтләндерә. Бригадаһын члендәре Май алды ярышына ҡушылдылар.

Тракторист иптәш Түләп СТЗ—НАТИ тракторы менән яҙғы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән уҡ смена заданиеһен систематик рәүештә 130—140 процентка үтәй. Ул тәүге 10 көндә 100 килограмдан күберәк яғыулыҡҡа экономия яһаны. Ошо уҡ трактор менән икенсе сменала эшләүсе иптәш Хәйбулла Бикколов көнөнә 9,2 гектар ер һөрә. Бригаданың тәгәрмәсле тракторҙарҙа эшләүсе механизаторҙары ла көндәлек нормаларын арттырып үтәйҙәр, эште юғары сифатлы итеп башҡаралар. Тракторист Айса Уразбаев һәм Нәкиә Байрамғолова иптәштәр ер һөрөүҙә смена нормаларын яҡшы сифатлы итеп үтәйҙәр.

Иптәш Бикколов етәкселек иткән трактор бригадаһы быйыл Ленин исемендәге колхоздың 92 процент сәсеү майҙанын эшкәртәсәк. Трактористәр колхоз менән төҙөшкән договорҙы намыҫ менән үтәйҙәр. Эш сифатлы итеп башҡарыла, тупраҡ культуралы итеп эшкәртелә. Һөрөү тик предплужниклы һабандар менән генә үткәрелә.

Б. Һунаҡбаев.

* * *

Үргә-Ҡыйғы. (Телефон аша). Ҡыйғы районының бөтә колхоздарында ла баҫыу эштәре киң йәйелдерелә. Колхозсылар һәм механизаторҙар һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планың йомғаҡтарын хуплап, күтәренке йөкләмәләр алалар.

Ленин исемендәге эреләтелгән ауыл хужалығы артеле члендәре 2000 гектарҙан артыҡ сәсеү планын 5—6 эш көнөндә үтәргә һүҙ бирҙеләр. Бында 2 көн эсендә генә 400 гектар бойҙай сәселде. Колхоз председателе иптәш Ғибатуллин колхозсыларҙың эшен дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә, нормалар тәүге көндә үк арттырылып үтәлде, эш сифаты яҡшы.

Калинин исемендәге колхозды иптәш Закиров етәкселек иткән трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Был алдынғы бригаданың тракторисе иптәш Ласыпов беренсе сменала уҡ нормаһын 134 процентка үтәне һәм 33 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Уның менән ярышып эшләүсе иптәш Латыпов та 2-шәр норма эшләй һәм 28 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Ғирфанов етәкселек иткән колхозда тәүге 3 көн эсендә генә 400 гектар борсаҡ һәм бойҙай сәселде. Баҫыу эштәрендә бөтә колхозсылар ҡатнаша.

Колхозсылар баҫыу эштәрен юғары агротехник кимәлдә үтәү өсөн көрәшәләр.

Н. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

* * *

Һаҡмар совхозы (директоры иптәш Житин, партия ойошмаһы секретары иптәш Черепахин) Беренсе Май байрамын ҡаршылау хөрмәтенә үҙ өҫтөнә алған йөкләмәһе намыҫ менән үтәне. Совхозда иртә культуралар сәсеү планы срогынан алда, 5 көндә тамамланды. Бөтәһе 1330 гектар майҙанда иртә культуралар, шул иҫәптән 697 гектар бойҙай, 510 гектар һоло, 123 гектар арпа сәселде. Бынан тыш, 170 гектарҙа силос өсөн көнбағыш сәселде, 8 гектарҙа оялы ысул менән имән сәтләүектәре ултыртылды.

Совхоз механизаторҙары баҫыу эштәрендә машиналарҙы тулыһынса файҙаланалар. Тракторисҭарҙан ДТ—54 тракторында эшләүсе Руденко һәм СТЗ—НАТИ тракторында эшләүсе Апыхтин иптәштәр һәр сменала уртаса 35-әр гектар аплаҡ сәстеләр. Тарасов, Черепахин һәм Андриянов иптәштәр ҙә смена заданиеһен арттырып үтәйҙәр. Механизаторҙар хәҙер һуңғы культуралар сәсеү өсөн ер әҙерләйҙәр.

У. Еникеев,
Һөтсөлөк-сусҡасылыҡ совхозының цехсының өлкән экономисы.

Әбйәлил районы «Путь коммунизма» колхозын Әбйәлил МТС-ының 6-сы номерлы трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Трактористәр һөрөүҙә һәм сәсеүҙә смена нормаларын 110 — 120 процентка үтәйҙәр.
Һүрәттә: (һулдан уңға) 1) тракторҙар менән ер һөрөү; 2) трактористәрҙән К. Шишкин, П. Сериков, А. Артамонов иптәштәр смена нормаһының үтәлешен тикшерәләр; 3) агрегат сәсеүҙә. Алғы сафта — «Путь коммунизма» колхозы председателе Ш. Солтанов, колхоз партия ойошмаһы секретары В. Извеков иптәштәр сәсеүҙең сифатын тикшерәләр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Пропагандистәр менән эшләү

Һуңғы йылдарҙа Бөрә район партия ойошмаһында политик белемдәрен күтәреү өҫтөндә эшләүселәр һаны артты, күп коммунистар марксизм-ленинизм теорияһын тәрән, беренсе сығанаҡтар буйынса өйрәнә башланылар. Мәҫәлән, политик мәктәптәрҙә уҡыусы коммунистарҙың һаны кәмене, ә ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын өйрәнеүселәр байтаҡ артты. Политик мәктәптәрҙә беренсе һәм икенсе уҡыу йылында 162 коммунист уҡый, ә ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын 500 коммунист өйрәнә. Шулай уҡ, В. И. Ленин һәм И. В. Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 10 түңәрәк ойошторолдо.

Бынан тыш, быйыл райондағы партия ойошмаларында 14 кискә партия мәктәбе эшләй. Уларҙа ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү буйынса түңәрәктәрҙе тамамлаған коммунистар уҡыйҙар.

Партия мәғарифе селтәрендәге уҡыуҙарҙың юғары идея кимәлдә үткәрелеүендә төп уңышты пропагандист кадрҙар хәл итеүен иғтибарға алып, партия ойошмалары пропагандистарҙы һайлап алыуға һәм әҙерләүгә ҙур әһәмиәт бирҙеләр.

Пропаганда эшенә, политик мәктәптәр һәм түңәрәктәр менән етәкселек итеүгә 162 коммунист йәлеп ителде. Быларҙың күпселеге яҡшы әҙерләнгән, марксизм-ленинизм идеяһы менән нығылы ҡоралланған иптәштәр.

Үҙған йыл пропагандистар әҙерләү буйынса 15 көнлөк курс ойошторолдо. Был курста 30 кеше уҡып сыҡты.

Курста методик мәсьәләләргә айырыуса ҙур әһәмиәт бирелде. Үҙған уҡыу йылының эш тәжрибәләре күп кенә пропагандистарҙың теоретик яҡтан әҙерлектәре булып та занятиеләрҙе үткәреү методикаһын насар белеүҙәрен күрһәткәйне.

Был етешһеҙлектәрҙе ҡабатламау өсөн, беҙ үҙебеҙҙең иң яҡшы пропагандистарыбыҙҙың эш тәжрибәләрен популярлаштереүҙе ойоштороҙоҡ. Улар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Пропагандистарға планлы рәүештә теоретик һәм практик ярҙам күрһәтеү маҡсатында семинарҙар үткәрелә. ВКП(б) Үҙәк Комитеты тарафынан раҫланған уҡыу планы нигеҙендә, бындай семинарҙар быйылғы уҡыу йылында утыҙлап тапҡыр үткәрелде.

Был семинарҙарҙа марксизм-ленинизм классиктарының хеҙмәттәре буйынса лекциялар уҡыуға райондағы иң яҡшы көстәр йәлеп ителде. Бөрә уҡытыусылар институты директорының урынбаҫары иптәш Попова һуңғы семинарҙа «В. И. Ленин һәм И. В. Сталиндең большевиктар партияһының теоретик нигеҙҙәрен һалыуҙағы хеҙмәттәре» тигән темала лекция уҡыны. Шул уҡ институттың марксизм-ленинизм кафедраһы өлкән педагогы иптәш Фролова «Коммунистар партияһының манифесы — марксизмдең программа документы» тигән темаға һәм И. В. Сталиндең «Ленинизм нигеҙҙәре» тигән әҫәре тураһында, доцент Степанов В. И. Лениндең «Ни эшләргә?» тигән әҫәре, райком секретары иптәш Ирмашев В. И. Лениндең «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа» тигән әҫәрҙәре буйынса лекциялар уҡынылар.

Даими хәрәкәт итеүсе семинарҙарҙың систематик рәүештә үткәрелеүе пропагандист кадрҙарының теоретик кимәлен күтәреүҙә һәм занятиеләрҙә методик яҡтан дөрөҫ итеп ойоштороуҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Шуның өсөн беҙ семинарҙарҙы айырыуса әҙерлекле һәм ойошҡан рәүештә үткәрәбеҙ. Унда райондағы иң яҡшы пропагандистар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар.

Пропагандистар араһында Панфилов исемендәге колхоздың партия ойошмаһы эргәһендәге политик мәктәп етәксеһе иптәш Николаев айырыуса яҡшы эшләй. Ул занятиеләрҙе методик яҡтан дөрөҫ алып бара һәм юғары идея-политик кимәлдә үткәрә. Уның һөйләүе һәр ваҡыт образлы, аңлайышлы була. Коммунистар хәҙер ВКП(б) тарихенең XII бүлеген өйрәнеү өҫтөндә эшләйҙәр.

Шулай уҡ, «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәктәренең етәкселәре Валитов, Ишметов, Иксанов, Сәғитов, Латипова иптәштәр ҙә үҙҙәренә тапшырылған эште намыҫлы үтәйҙәр.

Бынан тыш, быйыл консультанттар һәм марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен үҙ алдарына өйрәнеүселәр өсөн «Россия социал-демократик партияһының ойошторолоуы» тигән темаға, В. И. Лениндең «Ни эшләргә?», «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән әҫәрҙәре һ. б. буйынса 6 лекция уҡылды.

Пропагандистар һәм консультанттар һайлап алыу, ул ярты эш — уңыштың башланғысы ғына әле. Шуға күрә, политик мәктәптәрҙә һәм түңәрәктәрҙә занятиелар юғары идея-политик кимәлдә үтһен, коммунистар, интеллигенция һәм партияһыҙ актив большевизм теорияһы менән нығлап ҡоралланһын өсөн, систематик рәүештә пропагандистар менән эшләргә, уларға етәкселекте һәм систематик контролде булдырырға, эшлекле практик ярҙамды һәр ваҡыт көсәйтергә кәрәк.

Р. Әхмәдиев,

ВКП(б)-ның Бөрә район комитеты агитация һәм пропаганда бүлеге мөдире.

ПРОИЗВОДСТВОЛА СИФАТ КҮРҺӘТКЕСТӘРЕН ЯҠШЫРТАЙЫҠ

Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү — предприятиелә накопленнеең нигеҙе

Производство әлеге кесторен, сырье һәм материалдарҙы, яғыулыҡты, электр энергияһын рациональ файҙаланыу, материал һәм акса средстволарын һаҡлыҡ менән тотоноу [illegible] мөһим һөҙөмтәләр биреү мөмкин.

Экономия режиме өсөн көрәш — ул һәүбәттәге, ағымдағы кампания ғына түгел. Государство средстволарын һаҡлыҡ менән тотоноу тураһында һәр көн һайын хәстәрлек күреүгә ҡарай. Шул ваҡытта ғына акса һәм материал средстволарын экономиялауҙа тейешле уңыштарға өлгәшергә мөмкин. Производство планын уңышлы үтәү, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүгә мөмкинлек бирә.

Черниковск ҡалаһының 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһы коллективы был яҡтан байтаҡ уңыштарға һәм сифат күрһәткестәрен яҡшыртты.

Коллектив 1950 йылдың ноябрь айында уҡ йыллыҡ планды үтәне. Ә шырпы эшләп сығарыу буйынса биш йыллыҡ планды [illegible]. Был йылда 5 миллион һумлыҡ артыҡ продукция [illegible] тыш продукция бирҙе. Хеҙмәт етештереүсәнлеге планға ҡарағанда 5 процентҡа күтәрелде. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡы — 3,3 процентҡа кәметелде. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн көрәш арҡаһында йыл эсендә 800 мең һумдан артығыраҡ пландан тыш экономия алынды.

Был күрһәткестәргә фабрика коллективы Л. Корабельникова һәм Ф. Кузнецов иптәштәрҙең [illegible] өлгәште. Участкаларға сырье һәм материалдарҙы, яғыулыҡты, электр энергияһын һәм ярым фабрикаттарҙы экономиялау өсөн социалистик ярыш ойошторолдо. Коллектив бер йыл эсендә бик күп сырьеға, 11 тоннанан артығыраҡ ағасҡа, 4 тоннанан артығыраҡ [illegible] һәм башҡа материалдарға экономия яһаны. Бөтә төр материал һәм сырьеларға йыллыҡ экономия 233 мең һум тәшкил итте. Яғыулыҡ һәм электр энергияһын һаҡлыҡ менән тотоноу 400 мең һумдан артығыраҡ экономия алыуға мөмкинлек бирҙе. [illegible]

Производство күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн көрәштә стахановсылар һаны артты [illegible].

Быйыл 1 ғинуарға стахановсылар һаны коллективтың 75 процентын тәшкил итте. Стахановсы-строгальщик П. З. Кирәев үҙенең бригадаһындағы Комарова һәм Шеповалова иптәштәр менән көндәлек норманы систематик рәүештә 135 процентҡа үтәй. Улар бер йыл эсендә 85 мең һумлыҡ сырьеға экономия яһанылар.

Бригадир иптәш П. З. Кирәева [illegible] промышленносте министре [illegible] «сифат бригадаһы бригадиры» [illegible] Строгальщик иптәш Кузнецова [illegible] Баранова [illegible] 140 процентҡа үтәй. Улар [illegible] 56 мең һумлыҡ [illegible]

Стахановсы иптәш П. З. Кирәев [illegible] уртаса 136 процентҡа [illegible] 16 мең һумлыҡ материалға [illegible]

1951 йылда шырпы фабрикаһы коллективы [illegible] [illegible] тотоноуҙы һәм экономиялаштан [illegible] лар иҫәбенә һәр кварталда [illegible] ләүҙе бурыс итеп ҡуйҙылар.

Т. Тарасова,

Черниковск 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһының план бүлеге начальнигы.

Общественный малсылыҡ күтәрелештә

Ваҡ колхоздарҙы эреләтеү Зианчура районының малсылыҡ работниктарә алдында эре фермалар төҙөү өсөн ҙур мөмкинлектәр тыуҙырҙы һәм продукт биреүсе общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын срогынан алда үтәү өсөн ныҡлы нигеҙ һалды.

Райондың малсылыҡ работниктарә партия ойошмаларының ярҙамында күренекле уңыштарға өлгәштеләр. 1950 йылда общественный малсылыҡты үҫтереү планы бөтә төр малдар буйынса ла арттырып үтәлде. Малдарҙың продукт биреүсәнлеге лә яҡшырҙы.

Райкомдың ауыл хужалығы бүлеге үҙенең төп иғтибарын инициативалы һәм малсылыҡ эшен һөйгән кадрҙар һайлап алыуға һәм уларҙы тәрбиәләүгә йүнәлдерә. Колхоздарҙың малсылыҡ фермаларына ебәрелгән 30-ға яҡын коммунист һәм 60 комсомолец малсылыҡ работниктарын намыҫлы эшкә рухландыра, улар райкомдың ауыл хужалығы бүлегенең эшендә ышаныслы таяныс булып торалар.

Быға миҫал итеп И. Мәрсәлимов һәм Г. Артамонов иптәштәрҙе алырға мөмкин. Улар Карл Маркс исемендәге колхоздың малсылыҡ фермаларына етәкселек итә башлағас, колхоздың малсылыҡ хужалығы көндән-көн үҫә һәм нығый. Колхоз продукт биреүсе общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын үтәне, йөн һәм һөт алыу 1949 йылға сағыштырғанда 20—30 процентҡа артты.

Колхоз партия ойошмаһы (секретары иптәш А. Хәлитов) малсылыҡ фермаларының эшен үҙенең иғтибар үҙәгендә тота. Ферма работниктарә араһында политик-тәрбиә эштәре алып барыла, стена газеталары һәм боевой листоктар сығарыла, алдынғы эш тәжрибәләрен өйрәнеү буйынса беседалар һәм производство кәңәшмәләре үткәрелә. Производство кәңәшмәләрендә фермалар араһында төҙөлгән социалистик ярыш договорының үтәлеше тикшерелә; айырым работниктарҙың эшендәге етешһеҙлектәр асыла һәм был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү саралары билдәләнә. Продукт биреүсе общественный малсылыҡты үҫтереүҙә булған уңыштары өсөн был колхозға райкомдың һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

Колхоз партия ойошмалары тарафынан алып барылған массовый-политик эш малсылыҡ работниктарын фиҙакәр хеҙмәткә рухландыра. Куйбышев исемендәге колхоздың ат ҡараусыһы иптәш И. Баранов 12 бейәнән 12 ҡолон, Буденный исемендәге колхоздың ат ҡараусыһы иптәш С. Машков 16 бейәнән 16 ҡолон алып үҫтерҙеләр. Молотов исемендәге колхоздың һыйыр һауыусыһы иптәш Б. Зарипова 13 һыйырҙан 13 быҙау алып үҫтерҙе һәм һәр бер һыйырҙан 1688-әр литр һөт һауып алыуға өлгәште. Карл Маркс исемендәге колхоздың һыйыр һауыусыһы иптәш К. Байгилдина 8 һыйырҙан 8 быҙау алып үҫтерҙе һәм һәр бер һыйырҙан 1560-ар литр һөт һауып алды.

Малсылыҡ работниктарын һайлап алыу, уларҙы дөрөҫ урынлаштырыу һәм политик яҡтан тәрбиәләү эштәрендә яҡындан тороп ҡатнашыу менән бергә, райкомдың ауыл хужалығы бүлеге малсылыҡ работниктарының квалификацияларын күтәреүгә лә бик ҙур әһәмиәт бирә. Быйыл райондың 4 колхозында 3 йыллыҡ зоотехника курсы ойошторолдо, ә башҡа колхоздарҙа зоотехника түңәрәктәре эшләй. Куйбышев исемендәге колхоз эргәһендәге 3 йыллыҡ курста 16 занятие үткәрелде. Уның етәксеһе иптәш Рамазанова занятиеләрҙе тәрән йөкмәткеле итеп үткәрә.

Райкомдың ауыл хужалығы бүлеге район ауыл хужалығы бүлеге менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Ул район ауыл хужалығы бүлегенең малсылыҡ специалистарын айырым кустарға беркетеүҙе ойоштороҙо. Специалистар колхоз фермалары работниктарына практик ярҙам күрһәтәләр. Мәҫәлән, Куйбышев исемендәге колхозда һуңғы ваҡытта малдарҙың ябығa башлауы асыҡланғас, унда зоотехник иптәш С. Юлдашев ебәрелде. Иптәш Юлдашев фермала эште дөрөҫ ойоштороуға, ашатыу рационын хәл итеүгә ярҙам күрһәткәндән һуң ферманың эше яңынан юлға һалынды.

ВКП(б) райкомының һәм уның ауыл хужалығы бүлегенең общественный малсылыҡты үҫтереү өлкәһендәге ныҡышмалы эше ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Бер нисә ай инде беҙҙең район малсылыҡ буйынса республика райондарының социалистик ярышында беренселекте алып килә.

М. Соловьев,

ВКП(б) Зианчура райкомының ауыл хужалығы бүлеге мөдире.

Ике завод коллективе араһында социалистик ярыш

Белорет ҡалаһы промышленность предприятиеләрендә Май алды ярышы киң йәйелдерелеп, эшселәрҙең политик һәм производство активлеге көндән-көн үҫә бара. Предприятие коллективтары 1 Май байрамын тағы ла яҡшыраҡ производство күрһәткестәре менән ҡаршыларға әҙерләнәләр.

Май алды социалистик ярышының инициаторы булып ҡалала металлургия комбинатының Тирлән листопрокат заводы сығыш яһаны. Листопрокатсылар өлгөһендә металлургтар, метизниктар, тимер юлсылар һәм төҙөүселәр Май алды ярышын киң йәйелдерҙеләр. Белорет металлургия заводының мартен цехында мартен мейестәрен тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн ярыш киң ҡолас алған. Хәҙер 12 бригада, мейесте тулыһынса файҙаланып, 1950 йылға ҡарағанда ҡоросто байтаҡ артыҡ алыу өсөн ярыша.

Март айында Белорет металлургтары-на Чусовск металлургия заводының ст[а]хановсылар һәм инженер-техник р[або]тниктар делегацияһы килде. Проф[союз] йыйылышында был ике завод ара[һында] 1 Майҙы лайыҡлы ҡаршылау һәм 19[51] йыллыҡ программаны уңышлы үтәү т[ура]һында социалистик ярыш договоры [тө]ҙелде. Ике коллектив та йыллыҡ п[лан]ды срогынан алда үтәргә, государст[воға] пландан тыш байтаҡ суйын, ҡорос [һәм] прокат бирергә, оборудованиеларҙ[ы] һәм агрегаттарҙы файҙаланыуҙың коэфф[ици]ентын яҡшыртырға социалистик йөкл[әмә] алды. Бынан тыш, ике коллектив т[а] һим участкаларҙа һәм цехтарҙа [...] Ковалев методы нигеҙендә алдынғы [...] тәжрибәләрен өйрәнергә һәм уны [...] коллектив араһында таратырға к[...]тәр.

Өфө ҡалаһының Карл Маркс урамында тимер юлсылар өсөн 80 квартиралы торлаҡ йорто төҙөлә.

Һүрәттә: төҙөлештең стахановсы-ташсыһы иптәш А. Нигмәтуллин (алғы планда) эш өҫтөндә. Ул 1 Май хөрмәтенә көн һайын 2 норма үтәй.

А. Черpинский фотоһы.

Был заводтарҙың айырым бригадал[ары] һәм эшселәре араһында ла шулай [уҡ] социалистик договор төҙөлдө. Чусо[вск] заводының иң яҡшы домнасыһы [...] Евсеев үҙ бригадаһы исеменән Белор[ет] металлургия заводының домна [...] мастеры Сатонин һәм горновой [...] иптәштәрҙе ярышҡа саҡырҙы. Чусо[вск] заводының сталеварҙары Приходько һәм Бе[лорет] металлургия комбинаты сталева[р]ы Зимин, вальцовщиге Серегин һәм [Чу]совск заводы вальцовщиге Бугаев [ип]тәштәр араһында ла социалистик яр[ыш] договорҙары төҙөлдө.

Май алды ярышында хәҙер произво[д]ствоның яңы резервтары һәм мөмкинлек[тә]ре асыла, оборудованиеларҙы тул[ы] ҡеүәтендә файҙаланыуҙың яңы күрһ[ә]ткестәренә өлгәшелә.

А. Семаев,

ВКП(б)-ның Белорет ҡала комитеты промышленность һәм транспорт [бү]леге инструкторы.

РСДРП-ның IV (БЕРЛӘШТЕРЕҮ) СЪЕЗЫ

1906 йылдың 23 апрелендә Стокгольмда (Швецияла) РСДРП-ның IV съезы асылды. Был съезда большевиктар ҙа һәм меньшевиктар ҙа ҡатнашып, улар формаль рәүештә берҙәм партияға берләштеләр. Берҙәм Үҙәк Комитет һайланды. Шуның өсөн ул Берләштереү съезы тип атала. Шулай уҡ IV съезда РСДРП милли социал-демократик партиялар менән (Латвия, Польша, Литва) ҡушылды.

РСДРП үҙенең II съезында (1903 йыл) төп мәсьәләләрҙә фекер айырымлыҡтары һөҙөмтәһендә ике фракцияға — большевиктарға һәм меньшевиктарға бүленгәйне. Ул ваҡытта партиялағы фекер айырымлыҡтары; бигерәк тә, ойоштороу мәсьәләләрендә булды. Һуңға табан был айырымлыҡтар партияның стратегияһы, тактикаһы һәм программаһы мәсьәләләренә үҫеп. РСДРП-ла фактик яҡтан ике партия барлыҡҡа килде. 1905 йылда большевиктарҙың айырым съезы (III съезы), ә меньшевиктарҙың айырым конференцияһы булды. 1905 йылғы революция ваҡытында РСДРП-ла ике линия, большевиктар һәм меньшевиктар линияһы бар ине һәм был ике линия араһында бөтә төп мәсьәләләр буйынса килешмәүсән көрәш барҙы. Партия тарихенең ҡыҫҡаса курсында был ике линия тураһында былай яҙылған: «Большевиктар революцияны йәйелдереүгә, ҡоралы восстание юлы менән царизмды бәреп төшөрергә, эшселәр синыфының гегемонияһына, кадет буржуазияны изоляциялауға, крәҫтиәндәр менән союзға, эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең вәкилдәренән революцион Ваҡытлы хөкүмәт төҙөүгә, еңеп сыҡҡанға тиклем революцияны дауам иттереүгә курс тоттолар. Меньшевиктар, киреһенсә, революцияны йәйелдермәүгә курс тоттолар. Восстание юлы менән царизмды бәреп төшөрөү урынына улар яңы реформа яһауҙы һәм уны «яҡшыртыуҙы» тәҡдим иттеләр, пролетариат гегемонияһы урынына либераль буржуазия гегемонияһын, крәҫтиәндәр менән союз урынына — кадет буржуазия менән союзды, революцион Ваҡытлы хөкүмәт урынына — илдең революцион көстәренең үҙәге сифатында Государство думаһын тәҡдим иттеләр». («ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсы» 90-сы бит).

Эшселәр партияһының икегә бүленгән булыуы революцияның артабан үҫеүенә ҡамасаулыҡ итте. Эшселәр синыфының ҙур өлөшө большевиктар линияһын дөрөҫ табып, улар юлбашсылығында барһа, икенсе өлөшө меньшевиктарға эйәрҙе. Эшселәр синыфында берҙәмлек булманы. Меньшевиктар артынан эйәргән эшселәрҙе улардан айырып алыу һәм революцияла эшселәр синыфының берҙәм фронтын булдырыу өсөн партияның үҙенең берләшеүе кәрәк ине. Эшселәр үҙҙәре лә партия көстәренең берҙәмлеген, пролетариат партияһының берләшеүен талап иттеләр. Эшселәрҙең талаптарын большевиктар яҡланылар һәм партияның берләштереү съезын саҡырыуҙы меньшевиктарға тәҡдим иттеләр. Эшселәр массаһының баҫымы аҫтында меньшевиктар берләшеүгә ризалыҡ бирергә мәжбүр булдылар.

Ленин һәм Сталин берләшеү яҡлы булдылар. Ләкин улар был берләшеүҙә революция мәсьәләләре буйынса фекер айырымлыҡтарының ҡапланып ҡалмауын талап иттеләр. Улар большевиктар менән меньшевиктар араһында сербез фекер айырымлыҡтары юҡ, тип иҫбат итергә маташыусы соглашателдәргә ҡаршы ҡаты көрәш алып барҙылар. Ленин һәм Сталин большевиктарҙың ниндәй позицияла тороуҙарын һәм берләшеүҙең ниндәй нигеҙҙә булғанын эшселәр асыҡ аңлайышлы булһын өсөн, большевиктарҙың съезға үҙ платформалары менән килеүҙәрен талап иттеләр. Большевиктарҙың шундай платформалары съезға тәҡдим ителәсәк ҡарарҙар рәүешендә эшләнеп, уларҙы партия члендарының тикшереүенә ҡуйҙылар.

IV съезға урындарҙағы 57 ойошманан 111 делегат тауыш биреү хоҡуҡы һәм 22 делегат кәңәш биреү хоҡуҡы менән ҡатнашлыҡ итте. Бынан тыш съезда милли социал-демократик партияларҙан вәкилдәр булды: Бундтан — 3 кеше, Польша социал-демократик партияһынан — 3 һәм латыш социал-демократтары ойошмаһынан — 3 кеше ҡатнашты.

Съезда тауыш биреү хоҡуҡы менән ҡатнашыусы делегаттарҙың 46-һы большевик һәм 62-һе меньшевиктарҙан ине. Шулай итеп, съезд составының күпселек өлөшө меньшевиктарҙан торҙо. Уның шулай булыуына ҡайһы бер сәбәптәр бар. Декабрь ҡоралы восстаниеһе ваҡытында һәм унан һуң большевистик ойошмаларҙың күбеһе тар-мар ителде. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре съезға үҙҙәренең делегаттарын ебәрә алманылар; шуның өҫтәвә 1905 йылдың «азатлыҡ көндәрендә» меньшевиктар революцион марксизм менән һис бер уртаҡлығы булмаған бик күп ваҡ буржуа интеллигенцияны үҙ сафтарына ҡабул иттеләр. Быны шулай булыуын түбәндәге миҫал иҫбатлай: Промышленность эшселәре аҙ ғына һанда булған Тифлис ойошмаһынан килгән меньшевик делегаттарының һаны илдең иң ҙур пролетар үҙәге булған Петербург ойошмаһынан ебәрелгән делегаттар һаны менән берҙәй ине.

Съездың беренсе ултырышында уҡ, большевиктар менән меньшевиктар араһында ҡаты көрәш башланып, бөтә съезд буйынса дауам итте. Съездың составында, артыҡ ҙур булмаһа ла, меньшевиктар күпселек булыуы арҡаһында съезда ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың күпселеге меньшевистик булдылар.

IV съезда түбәндәге төп мәсьәләләр тикшерелде: аграр программа мәсьәләһе, ағымдағы моментҡа баһа биреү һәм пролетариаттың синфи бурыстары, Государство думаһына мөнәсәбәт тураһында, ҡоралы восстание, ойоштороу мәсьәләләре.

Съезд 15 көн дауам итте.

Съездың көн тәртибендә беренсе булып партияның аграр программаһын ҡайтанан ҡарау мәсьәләһе тикшерелде. Партияның беренсе аграр программаһы 1903 йылда партияның II съезында ҡабул ителгәйне. Был программала төп талап булып крәҫтиәндәр реформаһы ваҡытында помещиктар алып ҡалған «киҫентеләрҙе» (отрезка) крәҫтиәндәргә ҡайтарып биреү, крәҫтиәндәрҙең помещиктарға төрлө түләүҙәрен бөтөрөү бурысы ҡуйылғайны.

1905 йылғы революция осоронда крәҫтиәндәр «киҫентеләрҙе» ҡайтарыу талабы менән генә сикләнмәйенсә, помещиктарҙың бөтә ерҙәрен тартып алып, уны халыҡ милке итеп әйләндереү өсөн революцион көрәш алып бара башланылар.

Ерҙәрҙе национализациялаштырыу лозунгыһы крәҫтиәндәрҙе революцион көрәшкә саҡыра, революцияның буржуаз-демократик этабының социалистик этапҡа үҫеп әүерелеүен тиҙләтә ине.

Меньшевиктар, большевиктарҙың программаһына ҡаршы, ерҙәрҙе муниципализациялау тураһындағы оппортунистик талапты ҡуйҙылар. Съезда был программаны яҡлап меньшевиктарҙан Маслов менән Плеханов сығыш яһаны. Меньшевиктар программаһы буйынса ерҙәр помещиктар ҡулынан крәҫтиәндәргә күсмәйенсә, муниципалитеттар (урындағы самоуправление йәки земстволар) ҡарамағына күсәләр. Ә крәҫтиәндәр был ерҙәрҙе үҙ көстәренә ҡарап арендаға алырға тейештәр.

Меньшевиктарҙың программаһы крәҫтиәндәрҙе революцион көрәшкә саҡырмай, ул революцияны ярты юлда туҡтатыуға иҫәпләгәйне. Шуға күрә большевиктар меньшевиктарҙың аграр программаһын революция өсөн зарарлы, тип баһаланылар һәм уның оппортунистик асылын фаш иттеләр.

IV съезда былардан тыш тағы ла бер программа — бүлеү программаһы тәҡдим ителде. Съезда был программаны яҡлап Борисов доклад менән сыҡты. Был программа буйынса помещиктарҙан тартып алынған ерҙәр крәҫтиәндәр милкенә әйләнә. Ленин был программаны ауылдағы синфи көрәш перспективаһын иҫәпкә алмағаны өсөн хата программа тип ҡараны. Ләкин съезд меньшевиктар программаһын ҡабул итте.

IV съезда «хәҙерге моментҡа баһа биреү һәм пролетариаттың синфи бурыстары тураһындағы» мәсьәлә айырыуса киҫкен көрәш аҫтында тикшерелде. Меньшевиктар был мәсьәләне көн тәртибендә ҡуйып тикшереүгә ҡаршы килделәр. Ләкин ул Лениндең, большевиктарҙың талабы буйынса көн тәртибенә индерелде.

Был мәсьәлә буйынса доклад менән большевиктарҙан — В. И. Ленин, меньшевиктарҙан — Мартынов сығыш яһаны.

1905 йылдың декабрь ҡоралы восстаниеһе революцияның иң юғары нөктәһе булды. Батша самодержавиеһе восстаниене баҫтыра алды. Бынан һуң инде революция аҡрынлап сигенә башланы. Шулай ҙа революция баҫтырылмағайны әле. Эшселәр һәм революцион крәҫтиәндәр аҡрынлап, һуғыша-һуғыша сигенделәр. Көрәшкә эшселәрҙең яңы ҡатламдары ҡушылды. Шуға күрә большевиктар революцияның яңынан күтәреләсәгенә ышанғандылар, массаны буласаҡ революцияға әҙерләү яғында һәм уны аҙағына тиклем алып барыу яғында торҙолар. Большевиктар фекеренсә, революция тамам еңһен өсөн унда пролетариат гегемонлығы ролен уйнарға тейеш. Революция буржуаз-демократик революция булыуға ҡарамаҫтан, буржуазия унда гегемон бу[ла] алмай. Сөнки ул революцияны аҙ[ағына] тиклем итеп еткереү менән ҡыҙыҡ[һын]май, батша менән килешеүгә, рев[олю]цияны ярты юлда туҡтатып ҡалдыр[ырға] тырыша.

Меньшевиктар иһә, киреһенсә, революция буржуаз булғанлыҡтан уның гегемонлыҡ ролен буржуазия уйнарға, пролетариат буржуазияға ярҙам итергә тейеш тип ҡаранылар. Был оппортунистик установка ине.

Государство думаһы тураһындағы мәсьәлә буйынса ла меньшевиктар оппортунистик ҡараште булдылар. Улар государство думаһы революция алдында торған бурыстарҙы хәл итәсәк, тип [...]ләнеләр. Большевиктар иһә револ[юцион] бурыстарын хәл итеүҙә думаға [...] ярамай, ә массаны революцияға күт[әрер]гә, ҡоралы восстаниеға әҙерләргә [кә]рәк тинеләр.

Үҙәк Комитетҡа һайлауҙар мәсьәләһендә лә меньшевиктар өҫтөнлөк алды. [...] составына большевиктарҙан өс кеше [...] алты меньшевик һайланды. Үҙәк [...] редакцияһына бары тик меньшевиктар ғенә инде.

Шулай итеп, IV съезда ҡабул ител[гән] ҡарарҙар күпселектә меньшевистик [ха]рактерҙа булды. Ләкин большевиктар [...]ҙәрен еңелгән тип һанамаһындар [...] В. И. Ленин, большевизм берҙән-бер [дө]рөҫ политика һәм киләсәктә ул һәм [...] һөҙ еңәсәк, тип күрһәтте.

Партияның IV (Берләштереү) съезы[ның] төп әһәмиәте Россия социал-демократ[ияһы] эсендәге расколды формаль яҡтан бөт[өрөп], царизмға ҡаршы көрәштә эшселәр си[ны]фын берләштереүҙән, меньшевиктарҙың оппортунизмен конкрет миҫалдар мен[ән] фаш итеүгә юл асыуҙан тора. Өҫтә[үенә] ҙә большевиктар меньшевиктар артына[н] барыусы эшселәрҙе үҙ яҡтарына [...] ала алдылар.

Д. Әхмәров.

БАҪЫУ ЭШТӘРЕНДӘ УРОЖАЙҘЫ КҮТӘРЕҮҘЕҢ БӨТӘ РЕЗЕРВТӘРЕН ФАЙҘАЛАНАЙЫҠ!

Фән өлгәшеүҙәрен производствола киң ҡулланайыҡ

Мин, Башҡортостан баҫыусылыҡ ғилми-тикшеренеү станцияһы эргәһендәге мичуринселәр курсын тамамлап, бына хәҙер 7 йылдан бирле инде колхоз баҫыуында төрлө тәжрибә эштәре алып барам.

Тәжрибә эштәре беҙҙең колхозда урожайҙы күтәреүгә ҙур ярҙам итә һәм минең үҙемдең белемемде күтәреү өҫтөндә эшләүгә сериоз иғтибар биреүҙе талап итә. Совет тәжрибәсе-мичуринсе агробиология фәнен яҡшы белгәндә генә үҙенең ижади эшендә уңыштарға ирешә аласаҡ.

Үҙған йылды мин 8 төрлө тәжрибә үткәрҙем. Яҙғы бойҙайҙы көҙҙән сәсеү, картуфтың төрлө сорттарын өйрәнеү, мал аҙығы сөгөлдөрөнөң агротехникаһын өйрәнеү тәжрибәләре айырыуса яҡшы һөҙөмтәләр бирҙеләр. Мәҫәлән, яҙғы бойҙайҙы 1949 йылдың көҙөндә сәсеү алдынан уның орлоғо, 4,1 процентҡа саңлы мәшәкә менән зарарланғайны. Беҙ был орлоҡто ағыуламайынса сәстек. Былай сәсеп үҫтерелгән урожайҙа 1950 йылды инде мәшәкәтең бер нәмәһе лә ҡалмағайны. Тимәк яҙғы бойҙайҙы көҙ сәскәндә температура тәьҫире менән ундағы мәшәкә үҙенән үҙе юҡҡа сыҡты. Был методты дауам иттереп, бойҙайҙы тулыһынса мәшәкәтән таҙартыуға мин инде тулы ышанам һәм был бурысты һис шикһеҙ үтәп сығасаҡбыҙ.

Беҙҙең колхозда әлегә тиклем мал аҙығы сөгөлдөрөнән күп тигәндә 150 — 200 центнер урожай үҫтереп ала инек. Үҙған йылды мин агротехника комплексын ҡулланып, бер гектар майҙанда сөгөлдөрҙән 500 центнер урожай үҫтерҙем. Быйыл мал аҙығы сөгөлдөрөнөң гектарынан 600 центнер урожай үҫтереп аласаҡмын. Бының өсөн мин һәр бер гектарға 40 тонна тиреҫ индерәм, ерҙе август айҙарында уҡ 25 сантиметр тәрәнлектә тунға һөрөүҙе тәьмин итәм. Был участкала ҡарҙың тәрәнлек ҡатламын 70 — 80 сантиметрға еткерәм. Ә яҙ көнө беренсе мөмкинселек тыуғас та ерҙе тырмалап культивациялайым һәм яңынан тырмалап өҫтөнән каток менән баҫтырып сығам. Шулай әҙерләнгән тупраҡҡа сөгөлдөрҙе иң иртә сроктарҙа сәскес машина менән 45 сантиметр ара ҡалдырып сәсәм. Әгәр яҙ ҡоро килһә, сәскәс тә тупраҡты тағы бер тапҡыр каток менән баҫтырам.

Сөгөлдөрҙөң рәт араһындағы тупраҡты ат культивациялары менән 3-4 тапҡыр йомшартыу уҙғарабыҙ һәм минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрәбеҙ. Рәт эсендә сөгөлдөрҙөң үҫенте аралары 6 — 8 сантиметр ҡалдырып һирәкләйбеҙ. Үҙған йыл мин тәжрибә өсөн сөгөлдөр участкаһының бер өлөшөнә һыу һипкәйнем, унда һәр бер сөгөлдөрҙөң ауырлығы 8-9 килограмм булды.

Беҙҙең колхозда үҙған йылдарға тиклем сортһыҙ картоф сәселеп килде. Уның урожайлылығы 80 — 100 центнер менән туҡталып ҡала ине. Һуңғы ике йылда беҙ лорх сортлы картоф ултыртыуға күстек. Үҙған йылды бер гектар майҙанда был картофтан мин 315 центнер урожай үҫтереп алдым. Тәжрибә рәүешендә участкаһың бер өлөшөндә яровойлаштырылмаған, ә икенсе өлөшөндә яровойлаштырылған картоф ултырткайныҡ. Яровойлаштырылған картоф урожайҙы 128 центнерға артыҡ бирҙе.

М. Сәләхов,
Шаран районы «Сәп» колхозының тәжрибәсеһе.

Һайланған орлоҡтар ғына сәсергә

Мин Бөйөк Ватан һуғышына тиклем колхоздың лаборатория йорто менән етәкселек итеп килдем. 14 йыл буйына уҙғарылған минең төрлө тәжрибәләрем — колхоз хужалығы шарттарында тәжрибә эштәренең иң тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булып тороуҙарын асыҡ күрһәтәләр. Миҫал өсөн үҙған йыл үткәрелгән ҡайһы бер тәжрибәләрҙең һөҙөмтәһен күрһәтеү урынлы булыр.

Агрономия фәне һайланған орлоҡтар менән сәсеүҙең урожайҙы күтәреүҙә ҙур роль уйнауын күрһәтә. Шуға күрә мин үҙған йылды һайланып алынған орлоҡтар менән сәсеү буйынса түбәндәге тәжрибәне эшләп ҡараным. Яҡшы тупраҡлы һәм ашланған 12 гектар майҙанды урталай бүлеп бер өлөшөнә яҙғы бойҙайҙың һәр 1000 бөртөгө 33,2 грамм ауырлығындағы орлоғо менән, ә икенсе өлөшөндә ҡул менән һайланып алынған абсолют ауырлығы 40,1 грамм орлоҡ менән сәстем. Ҡалған агротехник саралар һәм эш сроктары һәр ике участкала ла бер төрлө ҡулланылды. Был тәжрибәнең урожайын айырым йыйып, айырым һуҡтыҡ. Һөҙөмтәлә ябай орлоҡ менән сәселгән 6 гектар майҙанда урожай гектарынан 10 центнер, уның йәнәшәһендә һайланып алынған орлоҡ менән сәселгән өлөшөндә 14 центнер булды. Был тәжрибәне үҙ күҙе менән күргәндән һуң, бригадирҙар һәм колхозсылар әре орлоҡ менән сәсеүгә ҙур иғтибар итә башланылар.

Бына тағы бер тәжрибә. Беҙҙең баҫыуҙарҙа карбонат тигән ҡара тупраҡ. Элек-электән былай тупраҡта тиреҫ индереүҙең урожайҙы күтәреүгә файҙаһы юҡ, тигән фекер йәшәп килде.

Киреһенсә, бер төркөм колхозсылар тиреҫте иң тиклем күп индерһән, урожай ҙа шул тиклем юғары була тигән фекерҙе ҡеүәтләйҙәр. Был бүталсыҡ мәсьәләләргә беҙҙең колхоз шарттарына ҡарата бер китапта ла яуап табып булмай, әлбиттә. Шуға күрә мин уларҙы үҙебеҙҙең тәжрибәләр менән халыҡҡа күрһәтеүҙе кәрәк табып, тәжрибә яһаным. Һәр баҫыуҙан 3 гектар участка бүлеп алдым да бер гектарына 40 тонна, икенсе гектарына 20 тонна тиреҫ сығарҙым, уларҙың йәнәшәһендәге бер гектар майҙанды тиреҫләмәйенсә ҡалдырҙым, мичуринселәр уны контроль участка, тиҙәр. 1949 йылды көҙҙән был участкаларға сәсеп ҡалдырылған арыштың урожайы, 40 тонна менән тиреҫләнгән ерҙән 18,5 центнер, 20 тонна менән тиреҫләнгәндә 17 центнер, ә бер ҙә тиреҫләнмәгән ерҙә 10 центнер булды. Тимәк, беҙҙең тупраҡ ҡара булыуға ҡарамаҫтан тиреҫләмәгәндә юғары урожай бирә алмай.

Минең йәшем 60-тан артыҡ булыуға ҡарамаҫтан, тәжрибә эштәрен киләсәктә лә дауам итәсәкмен. Минең фекеремсә, колхоздарҙа ауыл хужалығы культура йорттарын төҙөүҙе тиҙләтергә кәрәк. Шулай уҡ Башсельхозснаб ул йорттарға оборудованиеләр ҡайтарыу эше менән дә ныҡлыраҡ шөғөлләнһен ине.

Ю. Фәйрушин,
Бүҙәк районы «Ҡыҙыл маяҡ» колхозының тәжрибәсеһе.

Тупраҡты сәсеү алдынан эшкәртеүгә ныҡлы иғтибар

Тупраҡты сәсеү алдынан дөрөҫ һәм ваҡытында эшкәртеү юғары урожай үҫтереп алыуҙың нигеҙе. Ләкин ҡайһы бер колхоздарҙа әле һаман был эшкә иғтибар бирелеп еткерелмәйҙәр. Шуға күрә күп кенә колхоздарҙа баҫыуҙарҙы ҡый үләндәре баҫа һәм был түбән урожай алыуға килтерә. Ә тупраҡты сәсеү алдынан дөрөҫ һәм яҡшы итеп эшкәрткәндә, теләһә ниндәй һауа шарттарында ла үҫемлектәр көр булып сығалар һәм унда ҡый үләне лә булмай.

Үҫемлектәрҙе сәсеү дәүерендә тупраҡтың һәр ваҡыт дымлы булып тороуы талап ителә. Быға тик тупраҡты сәсеү алдынан яҡшы итеп эшкәрткәндә генә ирешергә мөмкин. Шуға күрә лә көҙҙән тунға һөрөп ҡалдырған ерҙәрҙе яҙ бик иртә бер-нисә аҙҙан тырматып сығарға кәрәк. Был, беренсенән, тупраҡта дымлылыҡты һаҡлаһа, икенсенән тупраҡта иртә шытып сыға торған ҡый үләндәрен бөтөрөүгә ҙур ярҙам итә.

Быны дөрөҫләү өсөн бер нисә миҫал килтерергә мөмкин. 1947 йылда Антонов исемендәге колхоз 7 гектар майҙанда һоло культураһын эшкәртелмәгән, тик көҙҙән тунға һөрөлөп ҡалдырылған ергә сәсеүгә юл ҡуйҙы. Ә ҡалған бөтә майҙан сәсеү алдынан яҡшылап эшкәртелде, бер нисә тапҡыр тырматылды, культивация үткәрелде, йомшартылды, унан һуң ғына сәскес менән сәселде. Билдәле, көҙ көнө был яҡшы эшкәртелгән майҙанға сәселгән һолонон һәр бер гектарынан уртаса 14-әр центнер, сәсеү алдынан тупраҡты эшкәртмәй сәскән майҙанда һәр бер гектарҙан бары 7-шәр центнер генә урожай алынды. Йәки бына икенсе миҫал. 1950 йылда «Алға» колхозы 25 гектар майҙанға бойҙай культураһын сәсеү алдынан тупраҡты эшкәртеүгә иғтибар бирмәйенсә, көҙҙән тунға һөрөп ҡалдырған ергә генә сәсеүгә юл ҡуйҙы. Билдәле, көҙ көнө колхоз был участканың һәр бер гектарынан ни бары 6-шар центнер ғына, ә агротехника ҡушҡанса, яҡшы эшкәртеп сәселгән бойҙайҙың һәр бер гектарынан уртаса 12-шәр центнер урожай йыйнап алынды.

Беҙҙең район көйөк ҡоролоҡло районда тупраҡты сәсеү алдынан агротехника ҡушҡанса, бигерәк тә комплексле рәүештә, яҡшы итеп эшкәртеү ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Хәҙер районның колхоздарында көҙҙән һөрөлгән ерҙәрҙе тырматыу эштәре бара. Матросов исемендәге колхоз тунға һөрөлгән бөтә майҙанды өс көн эсендә тырматып бөттө. Шулай уҡ мин етәкселек иткән сортлы тәжрибә участкаһында ла сәсеү алдынан тупраҡты эшкәртеүгә ҙур иғтибар бирелә.

Тупраҡты сәсеү алдынан яҡшылап эшкәрткәндә генә юғары урожай үҫтереп алырға мөмкин.

Агроном Н. Саламатин,
Әлшәй районы Матросов исемендәге колхоздың сорт-тәжрибә участкаһы мөдире.

Орлоҡтарҙы ҡояшта йылытып сәсеү

Мин колхозда 6 йыл инде агротехник булып эшләйем. Артель хужалығына, уның баҫыуҙарына фәндең яңылыҡтарын индереүҙә агротехника ҙур роль уйнарға тейеш. Ләкин фән тарафынан күрһәтелгән яңы агротехник сараларҙы киң ҡулланыуҙан алда, уларҙы һәр колхоздың үҙ шарттарында тәжрибәләр аръҡыры тикшереп ҡарарға кәрәк.

Мин Башҡортостан баҫыусылыҡ ғилми-тикшеренеү станцияһында тәжрибә эштәре буйынса әҙерлек алдым һәм был эште бик яратып башҡарам. Үҙған йыл бөртөклө орлоҡтарҙы ҡояшта йылытып сәсеүҙең урожайҙы күтәреүгә булған әһәмиәтен өйрәндем. Бының өсөн түбәндәге тәжрибәне үткәрҙем.

Тупрағы һәм агротехник торошо бер төрлө булған 40 гектар майҙанды ике тигеҙ өлөшкә бүлеп, тәүге 20 гектар участкала бойҙайҙың орлоғон ҡояшта йылытмайынса, ә икенсе 20 гектар өлөшөндә йылытып сәстем. Был тәжрибә бик яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Мәҫәлән, шытҡан орлоҡ менән сәскән участкала урожай һәр гектарҙан уртаса 18,5 центнер, ә контроль участкала бары 14,38 центнер булды. Бер үк норма менән сәскән һәм орлоҡтары бер үк тәрәнлеккә күмелгән бойҙай был ике участкала ике төрлө срокта үҫте. Ҡояшта ҡыҙҙырылған орлоҡ менән сәскән ерҙә орлоҡтар 4 көн алда шытып сыҡтылар һәм һәр квадрат метрға 486 үҫемлек булды, ә контроль участкала 341 генә үҫемлек булды. Продуктлы һабаҡтарҙың һаны ла ҡояшта йылытылған орлоҡ менән сәскән ерҙә квадрат метрҙа 381 дана, ә контроль участкала 312 дана тәшкил итте. Был тәжрибә орлоҡтарҙы ҡояшта йылытыуҙың иң тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булыуын күрһәтә.

Быйыл мин күп йыллыҡ үләндәрҙән юғары орлоҡ урожайы алыу, тупраҡтың һөрөнтө ҡатламын тәрәнәйтеү, гранул ашламалар индереү кеүек агрономия сараларының һөҙөмтәләрен өйрәнеүҙе, уларҙы дөрөҫ ҡулланыуҙың методтарын табыуҙы һәм башҡа ижади мөһим сараларҙы хәл итеү өҫтөндә эш күреүҙе үҙемә бурыс итеп ҡуйҙым.

Тик шуны әйтергә кәрәк, Башгосиздат тәжрибәселәргә ярҙамға тип йыйналған китаптарҙы тиҙерәк сығарһын ине, беҙҙең өсөн ундағы ҡулланмалар ҙур ярҙам буласаҡ.

Г. Батыршин,
Туймазы районы «Ҡыҙыл таң» колхозының тәжрибәсеһе.

Юғары сортлы орлоҡтар үҫтерәсәкбеҙ

Район үҙәгендәге «Совет» колхозы инде орлоксолоҡ колхозы булып тора. Был колхоздың иптәш Улямаев етәкселек иткән 3-сө номерлы бригадаһында юғары сортлы орлоҡтар үҫтерелә. Быйыл инде ул ике бригадала ла бойҙай сәсеү ҡабатлырылған сортлы орлоҡтар менән үткәреләсәк. Бурыс был колхозды яҡын арала район колхоздарына юғары сортлы орлоҡ үҫтереп биреүсе колхозға әйләндереүҙән тора.

Шуның өсөн дә, яҙғы агротехник сараларҙы тормошҡа ашырыу беҙҙең колхозыбыҙ өсөн айырыуса әһәмиәткә эйә булып торған эш ул. Беҙ быйыл 700 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тоттоҡ, 400 гектар майҙанда дым һаҡлау маҡсатында иртә яҙ тырматыу үткәрҙек.

Яҙғы агротехник сараларҙы үтәү өсөн көрәш айырыуса иптәш Улямаев етәкселек иткән 3-сө бригадала ла яҡшы алып барылды. Ошо бригаданы хеҙмәтләндереүсе Уляиев Ғәлиҙең трактор бригадаһы 270 гектар майҙанда тырматыу үткәрҙе.

Ә. Дильмөхәмәтов,
Учалы районы «Совет» колхозының агрономы.

АУЫЛ СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ ТРИБУНАҺЫ

Масса — ауыл Советенең төп терәге

Ауыл Советенең эшмәкәрлеге киң һәм күп төрлө. Ауылдағы бөтә хужалыҡ һәм культура төҙөлеше мәсьәләләре уның эшмәкәрлегенә инәләр. Тәжрибә бөтә был сараларҙы тик масса менән тығыҙ бәйләнеш тотҡан һәм Советтар эшенә хеҙмәтсәндәрҙе киңерәк ылыҡтырған ваҡытта ғына уңышлы тормошҡа ашырып булғанлығын күрһәтә. Быны иң өсөн дә беҙҙең Мәләкәҫ ауыл Советы масса менән эшләүгә айырыуса иғтибар итә. Беҙ депутаттар һәм актив аша хеҙмәтсәндәрҙең киң массаһын Совет эшенә ылыҡтырабыҙ һәм тығыҙ бәйләнеш тотабыҙ.

Миҫал итеп сәсеүгә әҙерлек эшен алырға мөмкин. Ауыл Советына ҡараған, әрелетелгән «Үрнәк» колхозы ауыл хужалығы инвентарҙарын ремонтлау, сәсеү орлоғон әҙерләү һәм башҡа сараларҙы уңышлы башҡарҙы. Ләкин колхоздың эске резервтарын файҙаланыу өсөн көрәш ҡәнәғәтләнерлек түгел ине әле. Беҙ, ауыл Советы депутаттары менән кәңәшләшеп, колхозсыларҙы эске резервтарҙы яҡшыраҡ файҙаланыуға мобилизовать иттек. Депутаттар һәм актив ярҙамында булған мөмкинлектәр иҫәпкә алынды. Бик күп колхозсылар үҙ фекерҙәрен әйттеләр.

Һөҙөмтәлә колхоздың урындағы ашламаларҙы файҙаланыуҙан ғына урожайҙы 10 процентҡа тиклем күтәреү мөмкинлеге барлығы асыҡланды.

Кирбес заводы төҙөүҙән дә күп доход алыу мөмкинлеге билдәләнде. Күмер яндырыу эшен ойоштороҙоҡ. Уҡытыусылар өсөн квартиралар төҙөү эшенә башланыҡ.

Ауыл Советы депутаттары Садыҡов, Вәлиева һәм Йыһанов иптәштәр юлдарҙы, күперҙәрҙе төҙөкләндереү мәсьәләһен күтәрҙеләр. Был эш буйынса улар үҙ һайлаусыларына мөрәжәғәт иттеләр. Һайлаусылар депутаттарҙың инициативаһын берҙәм хупланылар. Субботниктар ойошторолдо. Һәм шуның һөҙөмтәһендә беҙҙең ауыл Советы территорияһындағы күперҙәр төҙөкләндерелде, юлдар ҙа машиналар йөрөрлөк хәлгә килтерелде.

Депутаттарҙың инициативалары хеҙмәтсәндәр араһында һәр ваҡытта йылы яҡлау таба. Шундай бер миҫал килтерергә мөмкин. Беҙҙә башҡорт ете йыллыҡ мәктәбе юҡ ине. Мәктәп йәшендәге балалар татар мәктәбендә уҡырға мәжбүр булып торғайнылар. Ауыл Советы ете йыллыҡ мәктәп асыу һәм уның бинаһын төҙөү буйынса әҙерлек саралары күрҙе. Депутаттар мәктәп бинаһын төҙөүҙең ниндәй мөмкинлектәре барлығын һәм төҙөү өсөн күпме эшсе көстәре талап ителгәнлеген иҫәпләнеләр. Бөтә әҙерлек эштәре тамамланғас, улар актив менән берлектә колхозсыларға мөрәжәғәт иттеләр. Колхозсылар депутаттарҙың инициативаһын хупланылар. Төҙөлөш эштәре башланды һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ете йыллыҡ мәктәп өсөн бина төҙөлдө. Мәктәп матур итеп йыһазландырылған. Унда өс йөҙгә яҡын бала уҡый.

Ауылда медицина пункты төҙөлдө. Хәҙер тағы ла бер уҡыу өйө, ясли итеп киптергес һәм башҡа төҙөлештәр бара. Бөтә был өлгәшеүҙәрҙә ауыл Советының масса менән тығыҙ бәйләнештә эшләүе бик асыҡ күренә.

Һайлаусыларҙың жалобаларын үҙ ваҡытында хәл итеүгә һәм уларҙы хәл иткәндә ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшеүгә айырыуса әһәмиәт бирелә. Бер генә жалобаның да оҙаҡ ятыуына юл ҡуйылмай. Депутаттар һәм актив жалобаларҙы хәл иткәндә колхозсылар менән дә кәңәш итәләр, дөрөҫ хәл итеү юлын масса менән берлектә табалар.

Инициативалы һәм берҙәм эшләү хужалыҡ һәм политик кампанияларын уңышлы уҙғарыуға мөмкинлектәр бирә. Колхоздың сәсеү орлоғон таҙартып бөткәс, уның дымлылығы юғары икәнлеге беленде. Ауыл хужалығы специалистары уны киптерергә кәңәш бирҙеләр. Ауыл Советы депутаты иптәш Ғимашева орлоҡто йорттарға алып киптереү мәсьәләһен күтәрҙе һәм беренсе булып үҙе башлап ебәрҙе. Уның башланғысына ауыл Советының активисе иптәш Ғафарова ҡушылды. Улар өлгеһендә колхозсылар был эште уңышлы башҡарҙылар. Тик иптәш Ғимашева үҙе генә колхоздың бер нисә центнер сәсеү орлоғон киптереп, тейешле кондицияға еткереп бирҙе. Һөҙөмтәлә «Үрнәк» колхозы районда беренсе булып орлоҡ әҙерләү эшен уңышлы тамамланы.

Ауыл Советының ойоштороусанлыҡ көсө — массалар менән эшләүҙә. Колхоздың мул урожай өсөн көрәше лә шуға бәйләнгән. Ауыл Советы депутаттарының инициативаһы менән агротехник саралар планы ла колхозда 100 процентҡа үтәлде. Ауыл Советының уҡыу өйө бар. Уның мөдире иптәш Хәйретдинов колхозсыларҙың иң яраҡлы агитаторы. Ул депутат, яҡшы общественник. Уҡыу өйө аша колхозсылар араһында ҙур культура-ағартыу эше алып барыла. Бында колхозсы йәштәр актив ҡатнашалар.

Хәҙер ауыл эшсәндәре иң яуаплы осор — яҙғы сәсеү осорон кисерәләр. Ауыл Советы депутаттары сәсеүҙе иң ҡыҫҡа агротехник срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн колхозсылар араһында ҙур ойоштороу-массовый эштәрен үткәрәләр. Хеҙмәтсәндәр араһында Май алды социалистик ярышын йәйелдереүҙә инициатор булып торалар.

М. Әхмәтшин,
Мәсетле районы Мәләкәҫ ауыл Советы председателе.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Аҡса туплау планын өҙәләр"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 30 март номерында Белорет районында аҡса туплау планының үтәлмәүе, бигерәк тә страхование түләүҙәрен йыйнау эшенең насар барыуы тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы БАССР Финанс министерствоһы редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Белорет район финанс бүлегенең госстрах буйынса өлкән инспекторы Булавин үҙ эшенә яуапһыҙ ҡарағаны һәм систематик эскелек менән шөғөлләнгәне өсөн эшенән бушатылды. Шул уҡ ваҡытта уны яуапҡа тарттырыу өсөн суд органдарына материал бирелде. Район финанс бүлеге мөдире иптәш Усанова районда страхование эштәре менән етәкселек итеүҙе ҡырҡа көсәйтергә һәм үҙ аппаратын тейешле кадрҙар менән тәьмин итеүҙә йылдам саралар күрергә тәҡдим ителде».

АДМИРАЛ ЛАЗАРЕВ

Рустың күренекле диңгеҙ сәйәхәтсеһе һәм флотоводеце адмирал Михаил Петрович Лазаревтың үлеүенә йөҙ йыл тулды.

М. П. Лазаревтың арыу-талыуҙы белмәүсе һәм маҡсатҡа йүнәлтелгән бөтә эшмәкәрлеге үҙ халҡына, үҙ Тыуған иленә фиҙакәр хеҙмәт итеүгә арналғайны. Уның етәкселегендә рус флоты күп тапҡырҙар гүзәл еңеүҙәргә өлгәште. Уның исеме һәр ваҡыт сит илдәрҙәге географтарҙың һәм диңгеҙ сәйәхәтселәренең ҡаҙаныштарын уҙа барған беҙҙең Тыуған илебеҙ география фәне, хәрби-диңгеҙ искусствоһы тарихе биттәренә алтын хәрефтәр менән яҙылған.

М. П. Лазаревтың бик күп героик подвигтарының һәм эшмәкәрлектәренең өсәүһе уны үлемһеҙ иттеләр.

Уларҙың беренсеһе — рус диңгеҙ сәйәхәтсеһе Фаддей Фаддеевич Беллинсгаузен менән берлектә донъяның алтынсы өлөшөн — Антарктиданы асыуҙан тора. Рус диңгеҙ сәйәхәтселәренең подвиге Антарктида континентын асыуҙа һәм тикшереүҙә Россияның беренсе булыуын раҫланы.

Икенсеһе — атаҡлы Наваринский һуғышында данлыҡлы боевой подвигтары булды, ул һуғышта Лазарев, «Азов» линия кораблена командалыҡ итеп, таң ҡалырлыҡ ҡыйыулыҡ, тиңдәшһеҙ батырлыҡ күрһәтте һәм көс яғынан өҫтөн булған дошманға ҡаршы операцияларға етәкселек итеп, һуғыштың рус флоты файҙаһына тамамланыуын хәл итте.

Өсөнсөһө — ҡеүәтле хәрби Ҡара диңгеҙ флотын тыуҙырыуҙа ҡатнашыу. Был флоттың моряктары араһынан Лазарев, туған флотоводецтарҙың данлыҡлы плеядаһын үҫтерә һәм тәрбиәләне.

Михаил Петрович Лазарев 1788 йылда, элекке Владимир губернаһында тыуған. 1803 йылда Диңгеҙ корпусын тамамлағас, ул алыҫ диңгеҙ сәйәхәтенә ебәрелгән. Биш йыл буйына диңгеҙҙә булыу талантлы егеткә хәрби-диңгеҙ искусствоһында бай тәжрибә тупларға мөмкинлек биргән. Лазарев үҙен ҡурҡыуҙы белмәүсе һәм тәжрибәле моряк итеп күрһәткән. 1813 йылда уға ер шарын әйләнеп сығыуға ебәрелгән «Суворов» кораблена командалыҡ итеү тапшырылған.

Дүрт йылдан артығыраҡ дауам иткән был сәйәхәт йәш лейтенантты тағы ла ныҡлыраҡ сыныҡтыра. Сәйәхәттән Тыуған илгә әйләнеп ҡайтҡандан һуң күп тә үтмәй, уға яңы почетлы бурыс йөкмәтелә, ул Көньяҡ боҙло океанды өйрәнеү буйынса «Мирный» шлюпкаһының командире сифатында оҙаҡ ваҡытҡа Антарктидаға экспедицияһына китә. Был экспедицияға бер үк ваҡытта «Восток» шлюпкаһы менән командовать итеүсе Фаддей Фаддеевич Беллинсгаузен етәкселек итә.

«Восток» һәм «Мирный» шлюпкаларында алыҫ экспедицияла булған рус моряктары бөтә донъя тарихендә иң гүзәл географик асыш эшләнеләр. Беллинсгаузен һәм Лазарев, ул ваҡытта фәндә хакимлек итеүсе Англияның күренекле диңгеҙ сәйәхәтсеһе Джемс Куктың, Көньяҡ поляр түңәрәге артында бер ниндәй ҙә ҡоро ер материге юҡ, тип әйтелгән раҫлауын беренсе тапҡыр кире ҡаҡтылар.

Көньяҡ поляр түңәрәге артында ерҙең булыуы тураһындағы мәсьәлә төрлө илдәрҙең географтарын оҙаҡ ваҡыттар буйы ҡыҙыҡһындырып килгән. 1772 йылда уҡ Англия хөкүмәте Көньяҡ материкты эҙләнеүҙәр өсөн Джемс Кук командаһында Антарктида экспедицияһын ойошторған. Кук өс йыл йөҙөп йөрөгән, ләкин материкты таба алмаған һәм Антарктидала материк бөтөнләй юҡ, тигән һығымтаға килгән. «Мин Көньяҡ ярым шар

океанын юғары киңлектә үттем, — тип яҙҙы ул үҙенең отчетында, — һәм материктың булыу мөмкинлеген кире ҡаҡтым, ул табылһа ла, уның бары тик полюсҡа яҡын, йөҙөп керә алмаҫлыҡ урында ғына булыуы мөмкин».

Рус шлюпкалары «Восток» һәм «Мирный» Көньяҡ поляр түңәрәген алты тапҡыр киҫеп үткәндәр һәм Беллинсгаузен һәм Лазаревҡа тиклем бер генә диңгеҙ сәйәхәтсеһе лә булмаған райондарға барып еткәндәр. 1820 йылдың 16 ғинуарында беҙҙең кораблдарыбыҙ Көньяҡ поляр түңәрәгенән көньяҡҡа табан ҡоро ер булғанлығын беренсе булып билдәләгәндәр. Был ерҙе ошо осорға тиклем бер кем дә белмәгән. Был көн алтынсы материкте — Антарктиданы асыу көнө булып тора ла. Шул уҡ йылдың 21 ғинуарында һәм 5 февралендә рус шлюпкалары Көньяҡ материк ярҙарына яңынан килгәндәр. Бер йыл үткәс — 1821 йылдың 16 ғинуарында тикшерелмәгән ярҙарға килеп, Беллинсгаузен-Лазарев экспедицияһы таулы ерҙе асҡандар һәм уға Александр I яры тип исем биргәндәр. Быларҙың бөтәһе лә Антарктиданы асыуҙа рустарҙың приоритетын бәхәсһеҙ икәнлекте яңынан раҫланы. «Восток» һәм «Мирный» шлюпкаларының экипаждары донъяның алтынсы өлөшөнә етеп кенә ҡалманылар, бәлки Антарктида материген уратып үттеләр, мөһим океанографик тикшеренеүҙәр үткәрҙеләр, яңы диңгеҙ карталары төҙөнөләр.

Рус моряктары Антарктиданың сикһеҙ киңлектәрендә йөҙөүҙә булған бөтә мәхрүмлектәрҙе һәм ҡыйынлыҡтарҙы батырҙарса еңеп сыҡҡандар. «Восток» һәм «Мирный» Антарктида һыуҙарында йөҙөү ваҡыттарын, бер-береһенән айырылмай, әгәр ҙә ҡурҡыныс була ҡалһа бер-береһенә ярҙам күрһәтеүгә һәр ваҡыт әҙер булыу шарттарында үткәргәндәр. Ошонда, һис һүҙһеҙ, диңгеҙ сәйәхәтсеһе Беллинсгаузендең хеҙмәте ҙур әлбиттә, ләкин бында Лазаревтың күренекле оҫталығы төп ролдәрҙе уйнай.

Антарктида экспедицияһынан һуң Лазаревҡа, икенсе ранг капитан исеме һәм күп кенә наградалар бирелә. 1822 йылда ҡыйыу моряк «Крейсер» фрегатының командиры итеп билдәләнгән һәм ер шарын әйләнеп сығыу өсөн йөҙөүгә ебәрелгән. Лазарев ул ваҡытта бөтә донъя флоты моряктарынан елкәнле корабльда өс тапҡыр ер шарын урап сығыусы бер үҙе генә булған.

Ошо экспедициянан беренсе ранг капитан чинендә ҡайтҡандан һуң, Лазарев бер нисә данлы подвигтар яһаған яңы «Азов» кораблы менән командалыҡ итеүҙе ала. Ул 1827 йылдың авгусында Наваринский бухтаһындағы данлы диңгеҙ һуғышында үҙен гүзәл боевой командир итеп күрһәтте. Дүрт корабль һәм дүрт фрегаттан торған рус эскадраһы, төрөк флотын тулыһынса тар-мар итеүҙә хәл иткес ролдәрҙе уйнаны.

Наваринский һуғышында ҡатнашыусы бөтә корабль экипаждарынан бигерәк тә, Лазарев командаһында булған «Азов» корабле экипажы үҙенең батырлығын һәм оҫталығын күрһәтә. Дошман кораблдарының һәм ер батареяларының дауыллы уты аҫтында ҡурҡыуһыҙ һәм ҙур һалҡын ҡанлылыҡ күрһәтеүсе Лазаревҡа контр-адмирал исеме бирелгән. «Азов» корабле рус хәрби флотының тарихында беренсе булып юғары боевой отличие: кормовой георгий флагы исеме алған.

1832 йылда Лазарев Ҡара диңгеҙ флотының штаб начальнигы итеп, ә унан һуң уның командующийы итеп билдәләнә. Бигерәк тә ошо постта Лазаревтың флотоводец, личный составты тәрбиәләүсе, флот, порттар һәм крепостар төҙөүсе сифатында ҙур ойоштороусылыҡ һәләтлеге айырыуса күренә. Лазарев диңгеҙ эшен ныҡ яратҡан һәм уны бик яҡшы белгән. Ул Ҡара диңгеҙ флотын үҙгәртеп ҡороуға, уның һуғышсанлыҡ һәләтлеген күтәреүгә үҙенең бөтә көсөн һәм тәжрибәле боевой командир талантын биргән.

Лазарев ваҡытында Ҡара диңгеҙ флоты ҡеүәтле артиллерия менән тәьмин ителгән әр яңы конструкциялы судноларҙ менән тулыландырылған. Бөтә судноларҙа яҡшы әйрәтелгән командирҙар менән комплектовать ителгәндәр. Лазарев теләһә ниндәй корабльдең һәр ваҡытта ла һуғышҡа әҙер булыуы өсөн көрәшеп, корабль тормошона һәм боевой әҙерлеккә ныҡлы тәртип индергән. Ул офицерҙар составын матростар тураһында хәстәрлек күрергә өйрәткән, һәм матростарға туҡланыу һәм кейем өсөн ебәрелә торған суммаларҙың үҙ урындарында файҙаланылыуын үҙе ентекләп күҙәткән.

Ҡара диңгеҙ флотының һуғышсан һәләтлелеген ныҡытыу буйынса, личный составты тәрбиәләү буйынса үҙенең арыу-талыуҙы белмәүсе эшмәкәрлеге менән Лазарев, офицерҙар һәм матростар тарафынан ҙур мәхәббәт ҡаҙанған.

М. П. Лазарев 63 йәшендә 1851 йылдың 23 апрелендә үлгән. Рус флотының данын арттырыу өсөн күп тырышыусы атаҡлы адмиралдың эшен, ул үҫтергән кешеләр — Корнилов, Нахимов, Истомин, Бутаков, Новосильский, Попов һәм башҡа командирҙар лайыҡлы дауам итеүселәр булғандар. Улар бөтәһе лә Лазарев мәктәбенән сыҡтылар һәм 1854—1856 йылдарҙағы Ҡырым һуғышында Севастополде героик обороналау ваҡытында рус ҡоралын мәңгелек дан менән ҡапланылар.

Михаил Петрович Лазарев Тыуған илебеҙҙең күренекле улдары иҫәбендә инә. Улар тураһында иҫтәлек совет халҡында мәңге йәшәй. Рус флотының, героик рус моряктарының борон замандарҙан килгән традициялары гитлерсы Германияға ҡаршы Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Ҡара диңгеҙ моряктары тарафынан намыҫ менән үҫтерелделәр.

Бынан 130 йыл элек, донъяның алтынсы өлөшөн асыусы рус диңгеҙ сәйәхәтселәренең бөйөк фәнни еңеүҙәре яһалған Антарктидала хәҙер совет китобой флотилияһы йөҙә. Уның составы М. П. Лазарев башлаған Антарктида һыуҙарында тикшереүҙәр эшен дауам итә.

Профессор Н. Зубов.

ҒАРИФ ГУМӘР

ТЫНЫСЛЫҠ ӨСӨН

(БЕР ШАРШАУЛЫ ПЬЕСА)

Ҡатнашалар:

1. **Чарита.** Завод эшсеһе.
2. **Джон.** Эшсе. Ҙур ҡаҙҙале.
3. **Мэри.** Модалар ательеһында эшләй. Томсондың һөйгән ҡыҙы.
4. **Браун.** Негр, һуғыш инвалиды.
5. **Томсон.** Нәшерен агент, штатский кейемдә, сыйнап һөйләшә.

Кухня һымаҡ бүлмә. Төрлө яҡҡа китә торған өс ишек күренә, береһе тышҡы ишек (тамашасыларға ҡаршы). Уң яҡ мөйөштә карауат, уның эргәһендә өстәл, ултырғыстар. Шаршау асылғанда, завод гудогы тауышы ишетелә. Һул яҡтағы ишектән ҡулына сүкеш, тимерҙәр тотҡан Джон килеп сығып, сәхнә уртаһында баçып тора ла, һыҙғырынып, тышҡы ишектән сығып юғала.

Чарита (керҙе. Эш кейемендә, шләпәһе ҡырын төшкән, ҡара сәсе туҙған, йөҙө борсаулы). Көнө-төнө эшләп тә ярап булмай. Уйларға башың, һөйләргә телең, ашарға ауыҙың булмаһа, улар өсөн тағы ла әйбәтерәк булыр ине. Ҡулдарынан килһә, уйыңды һығауылап, уны ла төрмәгә ябырҙар ине. (Өстәл эргәһенә, ишеккә арты менән ултырҙы). Был заводтан да сығарып ташлаһалар, ҡайҙа барырмын? Джемдан да хат юҡ... Ни эшләп кенә йөрөй икән?... Һуғышта нимә эшләп йөрөйҙәр һуң? Ә мин бында кеше быçрағын таҙартам... (Шләпәһен һалып, ҡулына тотоп, уйланды. Джон инеп туҡтаны). Уны ла күпһенәләр... Эх, Советтар илендә тыуған булһамсы! Сталин илендә! Әгәр ҡулымдан килһә, шул матур илгә, ҡанатланып осор инем! Аһ, Сталин, белһәң ине һин беҙҙең хәлде!

Джон (уға яҡын килде). Ул уны белә.

Чарита (һертләп китте). Джон! Һин...

Джон (көләмһерәне). Ишеттем. Ҡурҡма! Мин үҙем дә ҡанатланып шунда осорҙай булам... Нинә былай ҡайғыға сумдың һуң әле һин?

Чарита. Теге ерән хәшәрәт Макс: һинең телең бик оҙайған, заводҡа килә торған юлыңды ҡыçҡартып ҡуймаһын ул телең, ти.

Джон. Ҡаршы һүҙ әйттеңме әллә?

Чарита. Ҡайҙа ул ҡаршы һүҙ әйтеү.

Джон. Ни өсөн икән һуң?

Чарита. Белмәйем. Иртә менән иптәштәремә: «Ни сыҡмаһа, беҙҙең илдән сыға: атом бомбаһы, йоғошло сир таратыу микробтары, ағыулы газдар... һуғыш, һаман һуғыш!.. Пән өшөй, күңел һыҡрай. Иремде Кореяға ҡыуҙылар. Унда уның ни алаһы ҡалған? Кем өсөн?..» тип һөйләшеп торғайным. Теге һимеҙ суҫҡа, Маргарита ишетеп еткергән, ахырыһы.

Джон (көләмһерәп). Һин һуғышты яратмайһың, ахырыһы? Уны яратырға кәрәк. Байлыҡ бит ул.

Чарита (ғәжәпләнде). Байлыҡ? Кемдәргә? Моргандарҙы, беҙҙең хужа Тапперҙымы?

Джон. Юҡ, ниңә уларҙы ғына? Беҙҙе лә.

Чарита. Беҙҙе лә?

Джон. Эйе. Беҙҙен ил бөтә донъяға хужа буласаҡ бит! Шунан һуң, донъя байлығын беҙгә лә бирәсәктәр икән. Бай буласаҡбыҙ! Герман фашистәре лә шулай бирҙеләр бит... (Шарҡылдап көлдө). Эх, Чарита, Чарита! Бына һин Советтар иленә осор инем, тиһең. Унда барыу әйбәт булыр ине, һүҙ юҡ. Ләкин ниңә беҙҙен үҙебеҙҙә лә шундай тормош ҡормасҡа, ә?

Чарита. Ҡорорһоң, көтөп кенә тор!

Джон. Эйе, көтөп торһаң, ҡороп булмаç.

Чарита. Ни эшләргә һуң?

Джон. Көрәшергә, һуғышырға кәрәк!

Чарита. Һуғышырға?

Джон. Эйе. Һуғышҡа ҡаршы һуғышырға, һуғышсыларға ҡаршы...

Чарита. Еңерһең уларҙы!

Джон. Ә рус эшселәренә күктән төшкәнме ни ул иркен, рәхәт тормош? Улар уның өсөн көрәшмәнеләрме?

Чарита. Уларҙа бит ана нинди кешеләр бар! Ленин... Сталин бар. Улар эшселәрҙең көрәш юлдарын яҡтырталар.

Джон. Ул яҡтылыҡ беҙгә лә төшә, Чарита!.. (Һағайҙы). Тсс! Кемдер килә! (Ишектән Томсондың башы күренде). О-кэй! Томсон! Рәхим итегеҙ!

Томсон (керҙе, эçеләнеп). Мин һеҙгә мистер Томсон булырмын, мистер Томсон!

Джон (мыçҡыллап). Мистер Томсон!

Томсон. Һин бында нишләп йөрөйһөң?

Джон. Мин бай эҙләйем. Бына һин бында нимә эшләп йөрөйһөң?

Томсон. Беренсенән, мин һиңә — һин түгел, ә икенсенән (эсә тауыш менән), ни эшләп йөрөүем тураһында миң һиңә отчёт бирергә бурыслы түгелмен! (Чаритаға ҡаш һикертте).

Джон. Улай икән.

Томсон. Шулай! Ирһеҙ ҡатындар эргәһендә бынан һуң эҙең булмаһын!

Джон. А-һа! (Ҙур йоҙороғон түйнәп, Томсондың танау төбөнә килтерҙе). Ә быны еçкәп ҡарағаның бармы?

Томсон (артҡа табан һикерҙе). Һинең менән шаярып торорға ваҡыт юҡ әле минең. (Йәһәт сығып китте).

Джон. О-кэй.

Чарита (сирҡанып китеп). Ошо Томсонды күрһәм, йылан күргәндәй, бөтә тәнемә һалҡын йүгерә.

Джон. Һаҡ бул һин уның! Ана шулай, Чарита, көтөп тороу менән генә беҙгә ул тормошто килтереп бирмәçтәр... Беҙ... Тсс!.. Тағы ла кемдер килә. (Һыҙғырынып сығып китте, Чарита тышҡы ишеккә табан барҙы).

Мэри (әкрен генә керҙе). Миссис, ғәфү итегеҙ, һеҙ бында тораһығыҙмы?

Чарита. Ошо кухня минең квартирам. (Мэриға ултырғыс бирҙе). Рәхим итегеҙ!

Мэри (ултырҙы, ҡараны). Рәхмәт! Һеҙҙең квартира? Уңайһыҙҙыр бит?

Чарита. Беҙҙең өсөн уңайлыһын һалмағандар шул әле.

Мэри. Һеҙ мистер Тапперҙың үгәй ҡыҙы мисс Элизаны беләһегеҙме?

Чарита. Беләм. Ул бында тора. Уға ана теге ишектән инергә.

Мэри. Хәҙер өйҙәме икән ул?

Чарита. Был ваҡытта өйҙә була. Кисәгенәк, заводтан эштән ҡайтҡас, әтеп ваннала йыуындырып сыҡҡайным.

Мэри. Һеҙ уның (Чаритаға аптырап, текләп ҡараны), әтеп йыуындырҙығыҙ?

Чарита. Ниңә иçегеҙ китте уға, мисс...

Мэри. Мин — Мэри, таныш булайыҡ.

Чарита. Мин — Чарита, мисс Мэри.

Мэри. Матур исем. Миссис Чарита улай булғас.

Чарита. Юҡ, просто Чарита! Миңә ҡайҙан килһен ул миссис?

Мэри. Һеҙҙең иregeҙ барҙыр бит?

Чарита. Ул Кореяла.

Мэри. Эмм... Ҡыйын.

Чарита. Кеше, үҙ башына килмәһә, кеше ҡайғыһын беләме ни? Бигерәк тә бына һеҙҙең кеүектәр.

Мэри. Минең кеүектәрме? (Борсолдо, алғына басты). Һеҙ юҡҡа миңә асыуланаһығыҙ. Нимәлер кәйефегеҙ киткән, ахырыһы?

Чарита. Миңә кәйеф килгәне юҡ ул. Ашарыңа етмәһә, уның өстәүенә эшләгән ереңдән, ошо кухнянан да һорон сығарырға теләһәләр, һеҙ ни эшләр инегеҙ? Йырлар инегеҙме, илар инегеҙме? Эх тормош, тормош! Аҙнала бүйына итле аш күрмәйһең... (Ултырҙы, һығҡрай башланы).

Мэри (йәһәт уны ҡосаҡланы). Сеү, иламағыҙ!

Чарита (аптырап, тартынып). Һеҙ мине ҡосаҡлайһығыҙ? Ерәнмәйһегеҙме?

Мэри. Нинди һүҙ ул? Мин дә бит һеҙҙең кеүек бер эшсе. Айырма бары тик шунда, хәҙергә байҙарҙың эттәрен ҡойондорорға ғына тура килмәй.

Чарита. Һеҙ шундай әйбәт, матур кейенгәнһегеҙ (кейемдәрен тотоп һоҡланып ҡарай) — миллионер ҡыҙы кеүек!

Мэри (көлдө). Миллионер ҡыҙы кеүекме? Мин бит модалар магазинында эшләйем. Былар — реклама өсөн кейелгән кейемдәр. Мисс Элиза магазинға үҙе барып йөрөргә иренгән дә, модисткаларҙың береһенә ошо кейемдәрҙе кейендереп, үҙенә ебәрергә ҡушҡан. Мине шуның өсөн ебәрҙеләр.

Чарита (уның ҡосағынан сыҡты). Кейемегеҙҙе быçратып ҡуйырмын.

Мэри. Зыян юҡ.

Браун (ишектән). Бер генә һыныҡ икмәк рәхим итегеҙ, меледи!

Чарита. Икмәгем юҡ шул, мистер.

Браун (ишектән башын тыҡты). Улай булһа, берәй йотом һыу булмаçмы икән?

Чарита. Һыу бар. Инегеҙ.

Браун (керҙе, Мэриҙе күреп артҡа сигенде). Ғәфү итеүегеҙҙе үтенәм, меледи! (алдына эйелде).

Мэри. Инегеҙ, ни! (Чарита һыу алып килде).

Браун. Минең йыным һеҙҙе борсор, меледи.

Мэри. Юҡты һөйләмәгеҙ. Мин дә һеҙҙен кеүек үк кеше.

Браун. Һеҙ кеше, ә беҙ — ҡара тәнлеләр кешеме ни?

Мэри (Чаританан һыуҙы алып, Браунға һуҙҙы). Эсегеҙ!

Браун (аптырап торҙо һәм ҡапыл алып, эсә башланы). Рәхмәт, ҡәрендәш!

Чарита (көлдө). Хәҙер генә меледи ине лаһа, нишләп шул арала ҡәрендәш булып китте?

Браун (Мэриҙең ҡулдарына текләп ҡарап). Эйе, эйе, меледиләрҙә былай ҡул булмай. Бында бит меңдәрсә эшә эҙҙәре бар. (Ултырҙы).

Чарита. Күҙҙәрегеҙ осло икән, мистер!

Браун. Осло булмаһа, полисмендең резинка күсәген күрмәй ҡалаһың, еңкәгә шап итеп ҡуя. (Тағы ла иркенәйә төштө). Һорауым өсөн ғәфү үтенәм, һеҙ эшселәр, ахырыһы? (Ҡатындар дәреçләп баш ҡаҡтылар). Эйе, эшсе булып тамаҡ туйҙырыу әйбәт эш.

Чарита. Тамаҡ туйҙырырлыҡ, йылы мөйөшлө булырлыҡ эш таба алһаң.

Браун. Эш бар ҙа ул. Һуғыш заводтары көнө-төнө гөүләп эшләйҙәр... Байҙарҙың тамаҡтарын туйҙырыр өсөн (көлдө).

Чарита. Һуғыш булмаһа, астан үлерҙәр ине, бахырҙар, тиһегеҙме һеҙ?

Браун. Ана шул үлмәç өсөн, яңы һуғыш әҙерләйҙәр ҙа шул инде улар. Ә беҙҙең кеүек ябай кешеләр уны аңламайҙар. (Көлдө). Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһындағы Мөрәжәғәткә ҡул ҡуялар.

Чарита. Ҡағыҙға ҡул ҡуйып ҡына һуғышты туҡтатып булмаç шул.

Мэри. Ҡул ҡуйыу менән генә һуғыш булмай торған булһа, мин мең тапҡыр ҡуйыр инем, меңдәрсә ҡағыҙға.

Браун. Һәм беҙҙең матур ҡулдарыбыҙ яҙған ҡағыҙҙар, ер йөҙөндә осоп, ҡысҡырып йөрөрҙәр ине: һуғыш булмаһын! — тип. Эйе, был ҡулдар (Мэриҙең ҡулдарын тотто) атом бомбаһынан көслөрәк!

Мэри. Ойдо!

Браун. Уйлап ҡарағыҙ, бына шундай, эш ҡыйратҡан, миллиондарса ҡуллар ҡул ҡуйҙар: һуғыш булмаһын! Беҙ һуғыш теләмәйбеҙ! — тиҙәр.

Чарита. Шулай ҙа ҡағыҙға ҡул ҡуйыу менән генә һуғышты еңеп булмаç, һуғыш тоҡандырыусыларҙы ҡурҡытып булмаç.

Браун. Дөрөç түгел. Улар ҡурҡалар, бик ҡурҡалар. Ҡурҡмаһар икән, нишләп улар шул ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйыусыларҙы эҙәрләйҙәр һуң? Ҡул ҡуйырға йөрөүселәрҙе төрмәләргә ултырталар?

Мэри. Уныһы шулай.

Чарита. Тыныслыҡ тураһында хатта һөйләргә лә ярамай, шуның өсөн эштән һөрөү менән янайҙар, янайҙар ғына ла түгел...

Браун. Ә ул турала һөйләргә кәрәк. Тыныслыҡ [illegible] һөйләргә кәрәк.

Чарита. Ә һеҙ һөйләр инегеҙме һуң?

Мэри. Бына һөйләп тора бит.

Чарита. Ул беҙгә бит. Байҙарға һөйләргә кәрәк.

Браун. [illegible]

Мэри. Тыныслыҡ тураһындағы ҡағыҙға ҡул ҡуйыр инегеҙме?

Браун. Мин ул ҡағыҙға ҡул ҡуйып, [illegible]

Чарита. [illegible]

Браун. [illegible]

Чарита. Төрмәгә ултыртыуҙан ҡурҡмайһығыҙмы?

Браун. [illegible]

Чарита (ҡарап). Ә Советтар Союзы?

Браун. [illegible]

Мэри, Чарита. Күрҙегеҙме?

Браун. [illegible]

Мэри (Чаритаға, һул яҡтағы ишекте күрһәтеп). Чарита, һеҙ мисс Элизаны ошонда тора тинегеҙме әле?

Чарита. Шунда, шунда. (Мэри йәһәт атлап һул ишеккә инеп юғала).

Браун. Миллиондарса кеше ҡул күтәрһә, һуғыш тоҡандырыусыларҙың ҡулдары ҡыçҡарыр. Ил еңкеһә, ер һелкенә. Иçән булып торорғоҙ! (Күрешәләр, ишектән Томсон килеп керҙе).

Томсон. О-кэй! Бик яҡшы! Бара торғас, һин, сулаҡ эт, элактең, ахырыһы? (Чаритаға) Ә һин ошо хамдың быçраҡ ҡулын ҡыçаһың, ә?

Браун (бик асыулы). Мин хаин түгел!..

Томсон. Тсс! Шаулама!

Браун. Мин донъя культураһын, кешелекте фашизмдан һаҡлау өсөн ошо ҡулымдан мәхрүм булған кеше. Мин — ватан патриоты!

Томсон (кеçәһенән револьвер сығарҙы). [illegible]

[illegible]

Томсон. Килеү генә түгел, арыҡтағына үтеп китер. (Алға табан атлаҙы, Браунға) Өйҙә ҡасандан бирле мин һинең менән булашам! Өйҙәгеҙ!

Мэри (арала төштө). Мине лә алып кит, мин дә ул ҡағыҙға ҡул ҡуйҙым!

(Ишектә ҙур сүкеш тотҡан Джон күренде).

Томсон (туҡталды, ҡағыҙҙы аҡтарҙы). Ҡул ҡуйҙың? Һин дә улар яҡлымы?

Бер эшсе (йәһәт кереп). Уға мин дә ҡул ҡуйҙым!

(Томсон аптырап ҡалды, яҡ-яғына ҡараны).

Джон (алдына килеп баçты, Томсон артҡа сигенде). Мин дә уға ҡул ҡуйҙым! (Томсон ҡаушаны, револьвер тотҡан ҡулы ҡалтыранып түбән төштө, башҡалар уға ерәнеп һәм мыçҡыллап ҡарайҙар).

Ш а р ш а у.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаçарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 21 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәре урынбаçарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 21 апрелдә СССР вәкиле А. Громыко председателлегендә 35-се ултырышы булып үтте.

Билдәле булыуынса, 20 апрелдәге ултырышта Громыко өс держава делегациялары тарафынан 17 апрелдә тапшырылған көн тәртибе проектын ышандырырлыҡ итеп тәнҡитләгәйне. Громыко, был проект ҡәнәғәтләнерлек булып тормай, сөнки ул тыныслыҡты һәм халыҡтар именлеген тәьмин итеүҙең совет делегацияһы тарафынан килтерелгән мөһим проблемаларын министрҙарҙың тикшереүен артҡы планға ҡалдырыу йәки бөтөнләйгә уны юҡҡа сығарыу маҡсатын тота, тип күрһәткәйне.

Ләкин 21 апрелдәге ултырышта АҠШ вәкиле Джессеп көнбайыштағы өс делегацияның 17 апрелдәге был проектын ыҡыжмалы яҡлауҙы дауам иттерҙе. Джессеп, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡораллы көстәрҙе ҡыçҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡуйыу АҠШ, Великобритания һәм Францияның политикаһын үҙгәртеү тураһындағы мәсьәләне ҡуйыу менән бер тигеҙ, тип танырға мәжбүр булды. Джессеп Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләне артҡы планға ҡуйыусы өс делегация формулировкаһын яҡлауҙы дауам иттерҙе. Ул үҙ позицияһын яҡлап бер генә дәлил дә килтерә алманы.

Унан һуң сығыш яһаған Франция вәкиле Пароди, гүйә, совет делегацияһы ентекле рәүештә иçбатлағанса, өс делегацияның «яңы» формулировкаһы, элеккеһе кеүек үк, асылда, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыçҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарауҙан баш тартыуҙы аңлатһа ла, көнбайыштағы өс держава делегацияһы ҡоралланыуҙар һәм ҡоралды көстәр тураһындағы мәсьәлә буйынса үҙ формулировкаларын бер ни тиклем ҡайтанан үҙгәртеп, имештер, шуның менән «совет делегацияһының талаптарына уступка» яһанылар, тигән бурысты «иçбатлауҙы» үҙ өçтөнә алды. Джессептан һуң Пароди, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыçҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарауға ҡарата совет тәҡдимен көнбайыш державалар ҡабул итә алмайҙар, сөнки был «үҙебеҙҙе ҡоралландырырға» тырышыуыбыҙға ҡамасаулыҡ итер ине, тип ошондай уҡ оятһыҙ асыҡтан-асыҡлыҡ менән белдерҙе.

Великобритания вәкиле Дэвис, Джессеп менән Паролиҙең дәлилдәрен ҡабатлап, уларҙың сығышына ҡушылды. Ул, «беҙ ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыçҡартыуға килтерәсәк нindәй ҙә булһа ҡарарҙарҙы бында ҡабул итә [illegible] быҙ», тип асыҡтан-асыҡ белдерҙ[illegible].

Джессеп, Дэвис һәм Пароди сы[illegible]рына яуап биреп, СССР вәкиле Гр[illegible] былай тине:

— Өс держава тәҡдимдәрен[illegible] формулировкаһына ҡарата совет [illegible]цияһы 20 апрелдә үҙ позицияһы[illegible] ҡайһе инде һәм, АҠШ, Великоб[illegible] һәм Франция вәкилдәре, айырым [illegible] да, дүрт державаның ҡоралланыу[illegible] һәм ҡоралды көстәрен ҡыçҡартыу [illegible] ошондай мөһим мәсьәлә буйынса [illegible] шеүгә өлгәшеүгә ынтылыу [illegible] беҙҙең кәңәшмәне кире яҡҡа [illegible] тип конкрет миçалдарҙа күрһә[illegible]. Совет делегацияһы, өс держава [illegible]ре тарафынан яһалған аҙымдарҙ[illegible] тәртибе буйынса килешеүгә өлгәше[illegible] терестәрендә совет делегацияһы т[illegible]нан яһалған практик аҙымдар мен[illegible] иçсек тә сағыштырып булмай, т[illegible] нисә тапҡыр күрһәтте. Совет деле[illegible]һы ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды [illegible] тәрҙе ҡыçҡартыу тураһындағы [illegible] буйынса үҙенен баштағы тәҡ[illegible] йөкмәткеһенә тейешле үҙгәртеүҙәр [illegible]реп, өс держава вәкилдәренең тел[illegible] яҡлағайны. Ә өс держава вәкилд[illegible] проекттарының йөкмәткеһен шул [illegible] ҡалдырып, бер нәмәне лә аңла[illegible]сы редакцион үҙгәртеүҙәр менән [illegible] сикләнергә ҡарар иттеләр. Улар, [illegible] алғанда, дүрт державаның ҡорал[illegible]ҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыçҡарт[illegible] кеүек ошондай мөһим мәсьәлә буй[illegible] килешеүгә өлгәшергә мөмкинлек бир[illegible] бер нинди ҙә аҙымдар яһамайынс[illegible] шыраҡ ҡулланыуға лайыҡлы бөт[illegible] ныҡышмалылыҡ менән бер урында т[illegible]ныуҙы дауам иттерәләр.

Германияны демилитаризациялау тура[illegible]һындағы мәсьәләгә ҡағылып, Гр[illegible] былай тине:

— Германияны демилитаризац[illegible] тураһындағы мәсьәлә шул тиклем [illegible] һәм үткер мәсьәлә булып тора, уға [illegible] тәртибендә тейешле урын бирелерг[illegible] йеш, тип беҙ күрһәткәйнек ин[illegible]. Бына шуға күрә лә беҙ был [illegible] шул уҡ бер пункт сиктәрендә бүл[illegible] артҡы планға ҡуйырға бөтә т[illegible] шыуҙарға ҡаршы киләбеҙ.

Громыко, өс держава вәкилдәре Г[illegible]манияны демилитаризациялау тураһ[illegible]ғы мәсьәләне артҡы планға ҡалдыр[illegible] Европала тыныслыҡты тәьмин итеү [illegible] был проблеманың мөһим әһәмиәт[illegible] булыуына ҡарамаçтан, дүрт держава [illegible] ил эштәре министрҙәренең уны тикш[illegible]реүен ҡаплап ҡалдырырға тырыша[illegible] тип ышандырырлыҡ итеп күрһәтте.

СССР вәкиле, бөгөнгө ултырыш [illegible] өсөн билдәләнелгән ваҡыттың бөтөр[illegible]ҡанлы мин үҙ сығышымды киләһе ул[illegible]рышта дауам иттерәсәкмен, тип белдер[illegible].

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 22 апрель. (ТАСС). Англия-Америка интервенттәренең ғәскәрҙәре 38-се параллелдән төньяҡтараҡ һөжүм итеүҙе дауам итгәләр.

Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, бөтә фронт[illegible]ҙа ла халыҡ армияһының частәре Ҡыт[illegible] добровольцтәренең частәре менән бер[illegible]тә оборона һуғышын алып барыуҙы [illegible]уам иттергәндәр.

Польша республикаһының президенте Б. Беруттың Берлингә килеүе

БЕРЛИН, 22 апрель. (ТАСС). Польша *республикаһының президенте* Болеслав Берут хөкүмәт делегацияһы оҙатыуында яуап визите яһау өсөн Германия демократик республикаһының президенте Вильгельм Пиктың саҡырыуы буйынса 22 апрелдә Берлингә килде. Польша республикаһының һәм Германия демократик республикаһының милли флагтары менән биҙәлгән көнсығыш вокзалда президент Берутты премьер-министр Отто Гротеволь, премьер-министрҙың урынбаçарҙары, хөкүмәт члендәре, халыҡ палатаһының председателе Иоганнес Дикман, Ҙур Бе[illegible]лин обер-бургомистры Фридрих Эбер[illegible] дипломатик корпус члендәре һәм башҡ[illegible] кешеләр ҡаршыланы.

Вокзал алдындағы киң [illegible] И. В. Сталин, Б. Берут һәм В. Пик [illegible]треттәре, байраҡтар һәм лозунгылар [illegible]нән Польша республикаһының президен[illegible]тен ҡаршылау өсөн йыйналған Бер[illegible] хеҙмәтсәндәре менән тулы ине.

Отто Гротеволь менән Болеслав Бер[illegible] ҡыçҡаса ҡотлау телмәрҙәре менә[illegible]лаштылар.

Чехословакияла яңы ордендәр һәм медалдәр булдырыу

ПРАГА, 22 апрель. (ТАСС). 22 апрелдә Прагала «Хеҙмәт геройы» тигән почетлы исем һәм «Социализм ордене», «Республика ордене», «Хеҙмәт ордене» тигән яңы ордендәр һәм «Тәҙәлештәге хеҙмәттәр өсөн», «Күренекле эш өсөн» һәм «Батырлыҡ өсөн» тигән медалдәр булдырыу тураһында Чехословакия хөкүмәтенең ҡарары иғлан ителде.

«Хеҙмәт геройы» тигән почетлы исем промышленноста, ауыл хужалығында, сауҙала, транспортта айырыуса күренекле новаторлыҡ эшмәкәрлеге өсөн, Чехословакия республикаһында социализмдың [illegible]үе өсөн көрәштә халыҡ хужалығын, [illegible] тураны һәм фәнде күтәреүгә булышлыҡ итеүсе айырыуса хеҙмәттәр, йәки [illegible]дарственың оборона һәләтлеген ныҡыт[illegible] буйынса айырыуса хеҙмәттәр өсөн [illegible]публика президенте тарафынан бирел[illegible].

«Хеҙмәт геройы» тигән исем бирелг[illegible] кешеләргә бер үк ваҡытта «Хеҙмәт ге[illegible]ройы» алтын йондоҙо һәм «Социализм ордене» тапшырыла.

Финляндияла Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалары йыйнау башланды

ХЕЛЬСИНКИ, 22 апрель. (ТАСС). Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә 22 апрелдә Финляндияла ҡул тамғалары йыйнау башланды.

Демократик матбуғат, илда ҡултамғалары йыйнауҙы үткәреү тураһындағы ҡарарҙы Финляндия хеҙмәтсәндәренең киң массалары рухланып ҡаршыланылар, тип күрһәтә. Ҡултамғаларды йыйнаусыларҙың күбеһе Мөрәжәғәткә ин кәмендә бер [illegible] ҡултамғаһы йыйнарға йөкләмә алды. [illegible] ҡыҙҡыусылар һәм һал ағыҙыусы[illegible] профсоюзының исполкомы тулы [illegible]сында Мөрәжәғәтте хупланы һәм [illegible] ландияның урман ҡырҡыусы һәм [illegible] ағыҙыусы бөтә эшселәрен был докум[illegible]кә ҡул ҡуйырға саҡырҙы.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаçары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01946 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

1951 йыл
№ 81 (8798)
25 апрель
шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ВКП(б) ӨЛКӘ КОМИТЕТЕНДӘ. Шаран районының МТС һәм колхоздарында яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙәге етешһеҙлектәр тураһында (1-се бит).

Ә. Шафиев. — Биш йыллыҡ планды үтәүҙә минең вкладым (1-се бит).

П. Поняева. — Совхоз эшселәренең намыҫлы эше (1-се бит).

Н. Ғәлимов. — Ҡыйғы районында механизаторҙарҙың хеҙмәте ойошторолмаған (1-се бит).

БАШҠОРТ АССР-ы СТАТИСТИКА УПРАВЛЕНИЕҺЕНЕҢ БЕЛДЕРЕҮЕ (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Н. Таҡаев. — Партия мәғарифе райкомдың иғтибар үҙәгендә (2-се бит).

М. Баранов. — Хеҙмәттә яңы уңыштарға өлгәшеү өсөн (2-се бит).

ПРОФСОЮЗ ТОРМОШО. Г. Рыбин. — Хеҙмәтсәндәрҙең индивидуаль баҡсасылығына иғтибарҙы көсәйтәйек! (3-сө бит).

МЕХАНИЗАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА. Е. Тулбаев. — Трактор агрегаттарының эшен сәғәт графигы буйынса ойоштороу (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. А. Әхмәров. — Картофты аштамалар менән ергә ултыртыу (3-сө бит).

И. Абдуллин. — Бәжәлә (4-се бит).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Көрәшләгы ваҡиғалар (4-се бит).

Яҙғы баҫыу эштәрендә хеҙмәтте дөрөҫ ойошторорға

Бөтә совет кешеләре шатлыҡ һәм күтәренке рух менән йәшәйҙәр. Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә героик совет халҡы һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡ планды уңышлы үтәп сыҡты. Был бөйөк еңеү һөҙөмтәһендә, беҙҙең социалистик индустриябыҙ менән бергә, ауыл хужалығы ла яңы ҡеүәтле күтәрелешкә өлгәште. Беренсе класлы техника менән байыҡтырылған колхоздар һәм совхоздар ауыл хужалығы продукттарын күберәк етештерә башланылар һәм социалистик малсылыҡты үҫтереүҙә уңыштарға өлгәштеләр.

Һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллыҡ осоронда колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыу, уларҙа хеҙмәтте ойоштороу һәм түләү эштәрен тәртипкә һалыу буйынса ҙур һәм серьез саралар тормошҡа ашырылды. Был колхоз производствоһында хеҙмәт етештереүсәнлеген байтаҡ күтәреүҙе, эштең сифатын яҡшыртыуҙы тәьмин итте.

Большевиктәр партияһы һәм Совет хөкүмәте 1951 йылда социалистик ауыл хужалығы алдына тағы ла яңы, серьез бурыстар ҡуя. Бында бигерәк тә урожайҙы күтәреү, бөртөклө ашлыҡтың һәм башҡа культураларҙың валовой йыйылмын арттырыу, игенселек культураһын һәм механизация кимәлен күтәреү айырыуса әһәмиәт тота.

Быйыл яҙғы баҫыу эштәрен өлгөлө үткәреү юғарыла әйтелгән мөһим бурыстарҙы хәл итеүҙә беренсе һәм иң әһәмиәтле этап булып тора. Быйыл яҙҙың ғәҙәттәгегә ҡарағанда иртәрәк килеүе эштә айырыуса ойошҡанлыҡты, хеҙмәт һәм материаль-техник ресурстарҙы тулыраҡ файҙаланыуҙы, колхоз ауылының бөтә көстәрен белеп файҙаланыуҙы талап итә. Бына шуға күрә лә колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәрендә хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу бик ҙур һәм хәл иткес әһәмиәткә эйә булып тора.

Тракторҙарҙы һәм ҡатмарлы ауыл хужалығы машиналарын, колхоздарҙағы эш көстәрен һәм эшсе көстәрен юғары етештереүсәнлеклә файҙаланыу, трактор һәм баҫыусылыҡ бригадалары эшендә ныҡлы бәйләнеште булдырыу тәп бына баҫыуҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуға бәйләнгән. Сөнки, эре колхоздарҙы эреләтеү һөҙөмтәһендә баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының роле айырыуса күтәрелде, һәм производство заданиеләренең үтәлеше өсөн бригадирҙарҙың яуаплылыҡтары тағы ла артты. Ә трактор бригадаларының сәғәт графигы буйынса эшләүгә күскәнлектәрен иҫкә алғанда, баҫыусылыҡ бригадаларында хеҙмәтте ойоштороу айырата ныҡлыҡ талап итә. Сәғәт графигы менән эшләнгәндә ваҡытты көн йәки аҙна менән түгел, ә сәғәт һәм минуттар менән иҫәпләргә тура килә.

Ләкин республика колхоздарында баҫыу эштәренең тәүге көндәре хеҙмәтте ойоштороу кимәленең түбән торғанлығын күрһәтте. Ауырғазы, Учалы, Туймазы һәм Көйөргәҙе райондарында баҫыу эштәренә етерлек тиклем ойошҡанлыҡ менән башланманы. Байтаҡ колхоздарҙа яҙғы сәсеү осорона эш пландары ла юҡ. Колхоздарҙа эш үҙ ағышына ҡуйылған, колхозсыларҙың хеҙмәттәре ойошторолмаған.

Мәҫәлән, Көйөргәҙе районының Хрущев исемендәге колхозында (председателе иптәш Атнабаев) производство заданиеләре баҫыусылыҡ бригадаларына еткерелмәгән. Бригада члендәре эш нормаларын белмәйҙәр. Шул уҡ ваҡытта бындағы ҡеүәтле «С—80» тракторы ярты көсө менән генә файҙаланыла. Хеҙмәтте ойоштороуға шундай уҡ ғәмһеҙ ҡараш «Коммунизмға юл» колхозында ла йәшәп килә. Һөҙөмтәлә, иң ҡиммәтле ваҡыт бушҡа үткәрелә, сәсеү эштәре өҙөлә.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында мал аҙыҡтары культуралары сәсеүҙең, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыуҙың барышы тураһында мәсьәлә тикшергәндән һуң партияның ҡайһы бер райкомдары, район Советтәре исполкомдары һәм машина-трактор станцияларының директорҙары мал аҙыҡтары культураларын сәсеүгә һәм урожайлылығын күтәреүгә яуапһыҙ ҡарайҙар, был тәңгәлдә хеҙмәтте яҡшылап ойоштормайҙар, тип билдәләне. Колхоздарҙа күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу планы ошо йылдың 20 апреленә ни бары 15,5 процентҡа ғына һәм тырматыу планы 17 процентҡа ғына үтәлгән. Воскресен, Ғафури, Стәрлетамаҡ, Стәрлебаш, Шишмә, Благовещен, Учалы һәм Бүшнаренко райондары күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуға әле булһа башламағандар.

Шулай уҡ ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы Шаран районы колхоздарында яҙғы сәсеүҙең барышы тураһында тикшереп һәм районның колхоздары, МТС-тары яҙғы баҫыу эштәренең беренсе көндәренән үк договор йөкләмәләрен серьез рәүештә боҙалар тип билдәләне. Колхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадаларында, шулай уҡ МТС-тарҙың трактор бригадаларында хеҙмәттең яҡшы ойошторолмауы, эш сифатының түбән булыуы, баҫыу эштәрен йәйелдереүҙә һуңлау һәм агротехник талаптарҙы һанға һуҡмау яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы үткәреүҙә төп тотҡарлыҡ булып тора.

Баҫыусылыҡ бригадаһы колхоздарҙың төп производство берәмеге булып тора. Тимәк, ул һәр ваҡытта ауыл хужалығы органдарының һәм колхоз етәкселәренең иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Баҫыусылыҡ бригадаларын нығытыу, уларҙың эшендә даими практик ярҙам итеү — яҙғы баҫыу эштәрендә хеҙмәтте ойоштороуҙың иң мөһим бурыстарынан береһе. Бригадир колхоз производствоһының үҙәк фигураһы булараҡ, бригаданың эше өсөн, уның йыллыҡ заданиеһе үтәүе өсөн һәм бригаданың һәр бер членен эштә дөрөҫ файҙаланыу өсөн тулыһынса яуаплы. Бынан күренгәненсә, ауыл хужалығы органдары, колхоз етәкселәре баҫыусылыҡ бригадаларының эшен систематик күҙ уңында тоторға, уларға һәр яҡлап ярҙамға килергә бурыслылар.

Яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы үткәреү — юғары урожайға нигеҙ һалыу тигән һүҙ. Агротехника сараларының бөтә комплексын — ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы, тырматыуҙы, яҙғы һөрөү эшен, тупраҡҡа ашламалар индереүҙе, арҡырыбуй сәсеү үткәреү һәм башҡаларҙы планда билдәләнгән срокларында үткәрергә кәрәк. Ә быға тик баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, шул нигеҙҙә эштең темпын һәм сифатын серьез күтәреү арҡаһында ғына өлгәшергә мөмкин. Тимәк, партия һәм совет ойошмалары, ауыл хужалығы органдары колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәре темпын һәм сифатын күтәреүҙе тәьмин итергә, колхоздар менән етәкселек итеү кимәлен күтәрергә тейештәр.

Яҙғы сәсеүҙең уңышлы үткәрелеүе — трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларында хәл ителә. Бөтә политик-массовый эш колхозсыларҙың эшләгән урындарында, баҫыу стандарында тупланырға тейеш. Колхоз партия ойошмалары социалистик ярышта бөтә колхозсыларҙың да актив ҡатнашыуын һәр бер колхозсының эш нормаларын үтәүен һәм арттырып үтәүен тәьмин итергә тейештәр.

Яҙғы баҫыу эштәре—айырыуса яуаплы һәм мөһим хужалыҡ-политик кампания ул. Уны уңышлы үткәреү сталинса юғары урожайға ныҡлы нигеҙ һалыу, социалистик ауыл хужалығын артабан күтәреү тигән һүҙ.

Колхоз ауылы эшсәндәре! Яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехника кимәлендә үткәреү өсөн 1 Май алды социалистик ярышын тағы ла киңерәк йәйелдерәйек! Был Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан арттырыуға, тыныслыҡ эшен нығытыуға ҙур вклад булыр.

Автомашиналарҙың ремонт-ара йөрөү срогын оҙайтыу өсөн

«Башнефтестрой» тресының автотрактор конторалы коллективы 1951 йылдың беренсе квартал планын 149 процентҡа үтәп сыҡты.

Шоферҙар араһында автомашиналарҙың ремонт-ара йөрөү срогын оҙайтыу өсөн хәрәкәт йәйелдерелде. 50-нән артыҡ шофер үҙ машиналарына капиталь ремонт яһамай, 100 мең километр юл йөрөргә йөкләмә алды. Шоферҙар Морозов, Абуҙаров һәм Алексеев иптәштәр был йөкләмәләрен үтәнеләр ҙә инде. Шоферҙарҙан Бухарев, Таһиров, Шеғальков һәм Ефименко иптәштәр капиталь ремонт яһамайынса 110 мең километр юл үтергә һүҙ бирҙеләр.

Машиналарҙың ремонт-ара йөрөү срогын оҙайтыуҙа ремонтсыларҙың да хеҙмәте ҙур. Начальнигы иптәш Смирнов булған ремонт мастерскойының нормаһын үтәмәүсе бер генә эшсе лә юҡ.

Транспортсылар араһында рационализаторлыҡ хәрәкәте лә киң урын алған. Алдынғы рационализаторҙар үҙҙәренең ҡиммәтле тәҡдимдәре менән производство күрһәткестәрен яҡшыртыуға ҙур ярҙам күрһәтәләр. Контораның баш инженеры иптәш Митяев рационализаторлыҡ тәҡдимдәрен йыйыу һәм уларҙы тормошҡа ашырыу эше менән өлгөлө етәкселек итә. 1950 йылда һәм ошо йылдың беренсе кварталында рационализаторҙар коллективе 70-тән артыҡ ҡиммәтле тәҡдим индерҙе.

Транспорт контораһы коллективы 1 Май байрамын яңы еңеүҙәр менән ҡаршылау өсөн стахановсы вахтаға баҫты. Транспортсылар байрам хөрмәтенә 4 ай эсендә 5 айлыҡ план үтәргә һүҙ бирҙеләр.

ВКП(б) Өлкә Комитетында

Шаран районының МТС һәм колхоздарында яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙәге етешһеҙлектәр тураһында

Шаран районы колхоздарында яҙғы сәсеүҙең барышы тураһындағы мәғлүмәттәргә ҡарағандың һуңында ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы, районның колхоздары һәм МТС-тары яҙғы баҫыу эштәренең беренсе көндәренән үк договор йөкләмәләрен серьез рәүештә боҙалар, тип билдәләне. Сифаттың түбән булыуы, баҫыу эштәрен йәйелдереүҙә һуңлау һәм агротехника талаптарын һанға һуҡмау яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙә төп етешһеҙлек булып тора.

Мәҫәлән, Ерекле МТС-ы зонаһындағы (директоры иптәш Сәхипгәрәев, политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Мансуров) Сталин исемендәге эргәләгән колхозда (председателе иптәш Садыҡов һәм партия ойошмаһы секретары иптәш Суфиянов) бойҙай сәсеү тунға һөрөлгән ерҙә культивацияламай, насар эшләүсе сеялкалар менән үткәрелә, шуның һөҙөмтәһендә орлоҡ 10 процентҡа тиклем күмдерелмәй ҡалдырыла.

Карл Маркс исемендәге колхозда тунға һөрөлгән ерҙәрҙе тырматыуға, культивациялауға һәм сәсеүгә тупраҡ тулыһынса әҙер булыуға ҡарамаҫтан, был эштәр тракторҙарҙың һәм тағылма ауыл хужалығы машиналарының төҙөк булмауы арҡаһында һуңлап башланған.

Шаран МТС-ы зонаһындағы «Марс» колхозында (председателе иптәш Тимеркәев һәм трактор бригадаһы бригадиры иптәш Мөсәүәров) С—80 тибындағы дизель тракторы ерҙе 12-13 сантиметр тәрәнлегендә һөргән, бригадаға беркетелгән 7 трактордың 4-һе тағылма инвентарь әҙер булмағанлыҡтан яҙғы баҫыу эштәрен һуңлап башлаған.

Чапаев исемендәге колхозда (председателе иптәш Антипов) яҙғы һөрөү айырым участкаларҙа тик 8—10 сантиметрға ғына һөрөлгән, ә 7 гектар майҙанға сәселгән бойҙай орлоғоноң 10 процент самаһы күмелмәй ҡалған.

Агротехниканы боҙоу һәм баҫыу эштәренең түбән сифатлы булыу фактары барлығына ҡарамаҫтан, МТС-тарҙың, ауыл хужалығы бүлегенең һәм колхоздарҙың агрономдары баҫыуҙарҙа һирәк булалар һәм яҙғы сәсеүҙең сифатын насар күҙәтәләр.

Шаранбаш-кнәз МТС-ы директоры (иптәш Ирназаров), Шаран МТС-ы (директоры иптәш Карманов) һәм айырым колхоз председателдәре договорҙар төҙөүгә яуапһыҙ ҡарағандар. Шаран МТС-ы буйынса «Марс» колхозында 94 гектар һәм «Красное знамя» колхозында 41 гектар яровой культуралар сәсеү планы урынлаштырылмай ҡалған.

Шаранбаш-кнәз МТС-ының Молотов исемендәге, «Пример», «Красноармеец» һәм «Большевик» колхоздары менән булған договорҙарында парға һөрөүҙе тамамлауҙың срогы 20 июлгә билдәләнгән, был ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарҙарын тупаҫ рәүештә боҙоу булып тора.

Техник культураларҙы сәсеү һәм тәрбиәләү буйынса, мал аҙығы әҙерләү һәм ағас ултыртыу эштәре буйынса МТС-тарҙың һәм колхоздарҙың йөкләмәләре күп договорҙарҙа күрһәтелмәгән һәм малсылыҡ буйынса сифат күрһәткестәре билдәләнмәгән.

Договорҙарҙағы күрһәтелгән етешһеҙлектәр райисполкомда договорҙарҙы раҫлаған ваҡытта ла төҙәтелмәй ҡалдырылаған.

Баҫыу эштәре башланыуға тиклем договорҙарға өҫтәмә килешеүҙәр бер колхозда ла төҙөлмәгән, был баҫыу эштәрен башлауҙы ғәфү ителмәҫлек һуҙҙы һәм трактор агрегаттарын бөтөнләй ҡәнәғәтләнмәҫлек файҙаланыуға килтерҙе. Трактор бригадаларында яҙғы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән алып үк тракторҙарҙың һәм ауыл хужалығы машиналарының техник яҡтан төҙөк булмауҙары һәм ойоштороу яғынан етешһеҙлектәр булыу арҡаһында байтаҡ ваҡыт буш тороуҙары урын алып килә.

Райондың бөтә МТС-тарында ла хеҙмәттең алдынғы методтарын ҡулланыуҙы һанға һуҡмаусы мөнәсәбәт йәшәй. Мәҫәлән, бөтә трактор бригадалары ла баҫыу эштәрен башлауға ҡарамаҫтан, бер генә бригадала ла эш сәғәт графигы буйынса ойошторолмаған.

Директорҙар һәм өлкән механиктар машина-тракторҙар паркын техник яҡтан дөрөҫ хеҙмәтләндереүҙе ойоштороуға яуапһыҙ ҡарайҙар. Ерекле МТС-ында, мәҫәлән, ике авто күсмә мастерской эшкә әҙерләнмәгән әле.

МТС директорҙарының политик эш буйынса урынбаҫарҙағы трактор бригадаларында массовый-политик эш менән йомшаҡ етәкселек итәләр, механизаторҙар араһында социалистик ярышты ойоштороуға формаль ҡарағандар һәм МТС-тар менән колхоздар араһында төҙөлгән договорҙарҙың үтәлешен өсөн ҡырҡа көрәш алып бармайҙар.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы Шаран районында сәсеүҙең тәүге көндәрендә баҫыу эштәрен үткәреүҙәге серьез етешһеҙлектәр ВКП(б) район комитеты, район Советы исполкомы һәм район ауыл хужалығы бүлеге тарафынан яҙғы сәсеүгә ҡарата ғәмһеҙ мөнәсәбәт булыуҙа, тип билдәләне.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы **ҡарар итте:**

1. ВКП(б)-ның Шаран район комитеты секретары иптәш Асҡаровҡа һәм район Советы исполкомы председателе иптәш Хафизовҡа яҙғы сәсеү эштәрен йәйелдереү, баҫыу эштәренең юғары сифатын тәьмин итеү һәм МТС-тарҙың шулай уҡ колхоздарҙың бөтә материаль-техник мөмкинлектәрен тулыһынса файҙаланыу эшендә машина-трактор станцияларына һәм колхоздарға ҡәнәғәтләнерлек етәкселек итмәүҙәрен күрһәтеп үтергә.

2. Яҙғы баҫыу эштәрен сиктән тыш аҡрын йәйелдереү, МТС-тар менән колхоздар араһында договорҙар төҙөүгә яуапһыҙ ҡарағандары һәм агротехника ҡағиҙәләрен тупаҫ рәүештә боҙғандары өсөн Шаранбаш-кнәз МТС-ы директоры иптәш Ирназаровҡа һәм Ерекле МТС-ы директоры иптәш Сәхипгәрәевкә шелтә иғлан итергә.

Әгәр улар юл ҡуйылған етешһеҙлектәрҙе һис кисекмәҫтән бөтөрөүҙә һәм яҙғы сәсеүҙе үҙ ваҡытында үткәреүҙе тәьмин итмәһәләр, тағы ла ҡатыраҡ яуапҡа тарттырыласаҡтар тип иҫкәртеп үтергә.

3. ВКП(б)-ның район комитетын, район Советы исполкомын һәм МТС директорҙарын (Карманов, Сәхипгәрәев һәм Ирназаров иптәштәрҙе) МТС-тар һәм колхоздар эшендә булған ошо ҡарарҙа билдәләнеп үтелгән етешһеҙлектәрҙе һис кисекмәҫтән бөтөрөргә һәм яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙә юғары сифат тәьмин итергә мәжбүр итергә. Ошо маҡсаттарҙа һәр бер трактор бригадаһы һәм колхоз буйынса трактор агрегаттарының һәм колхоздарҙың тартыу көстәре эшен ойоштороуҙарын тикшерергә, машина-тракторҙар паркын һәм колхоздарҙың ҡоралдарын яҡшыраҡ файҙаланыуға ҡарата ныҡлы саралар күрергә һәм ауыл хужалығы специалистарының тупраҡты әҙерләү һәм сәсеүҙе үткәреү сифаты өҫтөнән көндәлек контролде тормошҡа ашырыу буйынса етәкселектәрен көсәйтергә.

4. Район Советы исполкомын (иптәш Хафизовты) һәм район ауыл хужалығы бүлеген (иптәш Фәттәховты) МТС-тар менән колхоздар араһында договор төҙөшкәндә юл ҡуйылған етешһеҙлектәрҙе һис кисекмәҫтән бөтөрөргә һәм был эштә ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарҙарына ярашлы рәүештә кәрәкле тәртип урынлаштырырға.

МТС директорҙарына (Карманов, Ирназаров һәм Сәхипгәрәев иптәштәргә) договорҙар төҙөшкәндә юл ҡуйылған етешһеҙлектәрҙе ес көн срок эсендә бөтөрөргә һәм бөтә колхоздар менән өҫтәмә килешеүҙәр төҙөүҙе һис кисекмәҫтән тамамларға тәҡдим итергә.

5. Яҙғы сәсеүҙә тракторҙарҙы һәм ауыл хужалығы машиналарын юғары етештереүсәнлекле файҙаланыу маҡсаттарында ВКП(б)-ның район комитетын (иптәш Асҡаровты) район Советы исполкомы (иптәш Хафизовты) һәм МТС директорҙары (Карманов, Ирназаров һәм Сәхипгәрәев иптәштәрҙе) бөтә тракторсыларҙың, һабансыларҙың һәм сәсеүселәрҙең эшләп сығарыуҙа смена нормаларын үтәүҙәрен тәьмин итергә һәм бөтә тракторҙарҙың да ике сменала эшләүҙәрен ойоштороуға мәжбүр итергә.

Тракторҙарҙың төнгө сменалағы эшенә ныҡлы контроль булдырырға, бының өсөн төнгө эште ойоштороуҙа практик ярҙам күрһәтеү буйынса һәр бер трактор бригадаһына МТС-тарҙың һәм колхоздарҙың етәксе работниктарын беркетергә.

6. ВКП(б)-ның район комитетына, МТС директорҙарына һәм уларҙың политик эш буйынса урынбаҫарҙарына сәғәт графигы менән эшләүсе һәм тракторҙарҙы һәм шулай уҡ тағылма машиналарҙы юғары етештереүсәнлекле файҙаланыуҙа өлгәшкән алдынғы механизаторҙарҙың тәжрибәһен бөтә тракторсыларға, бригадирҙарға һәм учетчиктарға күрһәтеү юлы менән трактор бригадаларында сәғәт графигы менән эшләүҙе тәҡдим итергә.

7. МТС директорҙарынан тракторҙарҙың техник һәм ойоштороу етешһеҙлектәре арҡаһында тик тороуҙарын бөтөрөүҙе, трактор бригадалары менән запчаст бәйләнеш урынлаштырыуҙы һәм уларға машиналарҙың ватылыуҙарын һәм кәйһеҙ эшләүҙәрен бөтөрөүҙә кәрәкле ярҙам күрһәтеүҙәрен һәм авто күсмә мастерскойҙарҙың техник тәрбиә графигына ярашлы рәүештә өҙлөкһөҙ эшләүҙәрен тәьмин итеүҙе талап итергә.

8. ВКП(б)-ның район комитетын һәм МТС директорҙарының политик эш буйынса урынбаҫарҙарын трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларында массовый-политик эште ҡырҡа көсәйтергә, яҙғы баҫыу эштәренең хәл иткес участкаларына кәрәкле һанда коммунистарҙы һәм комсомолецтарҙы ебәрергә һәм эшләп сығарыу нормаһын үтәү һәм арттырып үтәү, яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү һәм бөтә ауыл хужалығы эштәренең отличный сифаты өсөн механизаторҙар һәм колхозсылар араһында социалистик ярыш ойошторорға мәжбүр итергә.

Баҫыуҙа эшләүсе колхозсыларҙы һәм тракторсыларҙы культура-тормош яғынан хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу буйынса кәрәкле саралар күрергә һәм һәр бер трактор бригадаһында вагончиктарҙың тулыһынса йыһазландырылыуына өлгәшергә.

9. ВКП(б) район комитеты секретарҙарын һәм МТС директорҙарының политик эш буйынса урынбаҫарҙарын ошо ҡарарҙы бөтә трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларында тикшерергә һәм уны үтәүҙе тәьмин итеүсе практик саралар билдәләргә мәжбүр итергә.

Совхоз эшселәренең намыҫлы эше

Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозы механизаторҙары иртә культураларҙы ҡыҫҡа сроктарҙа сәсеү өсөн үҙ-ара ярышалар.

«Батҡаҡ» бүлексәһе (управляющийы иптәш Бобков) иртә культуралар сәсеү планын 80 процентҡа үтәне. Был бүлексә тракторисы иптәш Николай Сериков 240 гектар ашлыҡ сәсте. «Комсомолец» бүлексәһендә тракторсыларҙан Михаил Кириллов һәм Иван Младчиков иптәштәр ҙә сәсеүҙә көндәлек норманы арттырып үтәйҙәр.

Пар һәм тунға һөрөлгән майҙандарҙы тырматыу тамамланды. Хәҙер һөрөү һәм сәсеү эше йәйелдерелде. 2000 гектар ер һөрөлдө, план 50 процентҡа үтәлде.

П. Поняева,
совхоз директоры.

Биш йыллыҡ планды үтәүҙә минең вкладым

Һуғыштан һуңғы сталинса пландың уңышлы үтәлеүе — беҙҙең өсөн ҙур шатлыҡ ул.

Биш йыл эсендә мин 9 йыллыҡ норма үтәнем. Бындайҙар беҙҙә күп. Ләкин был беҙҙең өсөн, совет кешеләре өсөн, хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреүҙә сик түгел. Бөтә резервтар һәм мөмкинселектәр бар. СССР Үҙәк Статистика Управлениеһенең һәм Государство План Комитетының белдереүенә яуап итеп, мин быйыл ай һайын производство программаһын 200 проценттан да кәмгә үтәмәҫкә һүҙ бирәм. Май алды социалистик ярышында мин, стахановсы вахтала эшләп, көндәлек норманы 215—220 процентҡа үтәйем.

Ә. Шафиев,
Ишембай ҡалаһының Сталин исемендәге машиналар төҙөү заводының инструменталь цехы слесары.

Ҡыйғы районында механизаторҙарҙың хеҙмәте ойошторолмаған

Ҡыйғы районы колхоздарында яҙғы баҫыу эштәре 15 апрелдә үк башланды. Ләкин Әбдрәзәк һәм Ҡыйғы МТС-тарының яҙға насар әҙерләнеүҙәре арҡаһында баҫыу эштәре тәүге көндәрҙә үк һүлпән темп менән барҙы. Тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар баҫыуға сығырсыҡмаҫтан ватыла башланылар. Смена нормалары үтәлмәй, трактор бригадалары сәғәт графигы менән эшләмәйҙәр. Ошо арҡала механизаторҙарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеге түбән. Күпселек бригадаларҙа төндә эшләү ойошторолмаған.

Ҡыйғы МТС-ы директоры иптәш Сляслин колхоздарҙа бик һирәк була, колхозға барған ваҡытта ла механизаторҙарҙың хеҙмәтен дөрөҫ ойоштороу мәсьәләләре менән шөғөлләнмәй.

— Миңә конторанан сығып китергә ярамай, юҡһа етәкселек аҡһай башлай,— ти иптәш Сляслин. Ул баҫыуҙа нисә трактор эшләгәнен дә ныҡлап белмәй. Директорҙың иҫәбе буйынса 15 колхозда көндә 63 трактор эшләргә тейеш. Ләкин уларҙың яртыһы ватылып эшләмәй ултыра. Сталин исемендәге ҙур колхозды был МТС-тың иптәш Хәкимьянов етәкселек иткән трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Бында тракторсылар үҙ-ара ярышмайҙар. Ә ике СТЗ—НАТИ тракторы сәсеү башланғандан бирле бер генә смена ла эшләмәгән. Колхозға МТС-тың күсмә мастерскойы ла килде. Килде лә бер нинди ярҙам күрһәтмәйенсә ҡайтып та китте. Унан һуң тракторҙар һаман эшләтелмәй ултыртылғас, МТС етәкселәре бында күсмә мастерскойҙы тағы бер тапҡыр ебәрҙеләр. Ә ҡеүәтле ике трактор һаман ватыҡ килеңсә тора.

— Тракторсылар тәжрибәһеҙ, машинаны һаҡлай һәм эшләтә белмәйҙәр, — ти иптәш Сляслин.

Ни өсөн МТС-та алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен өйрәнеүҙе ойоштормайҙар. Бында алдынғылар юҡмы ни? Алдынғы механизаторҙар бар. Тик ойоштороу һәм тәжрибәләрҙе пропагандалау саралары менән шөғөлләнеүсе етәкселәр генә юҡ. МТС директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Исхаҡов йәш механизаторҙар менән эшләүгә иғтибар итмәй. Ул да тик администраторлыҡ итеү менән генә сикләнә.

Был МТС-та Колупаев һәм Хөрмәтуллин иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадаларын маҡтайҙар. Һәм бик дөрөҫ маҡтайҙар. Ә уларҙың эше тураһында ҡалған бригадалар ҙа тик ишетеп кенә беләләр. Был ике алдынғы бригада үҙ-ара ярыша. Улар район механизаторҙары араһында беренсе булып Иван Бунеевтең башланғысына ҡушылдылар. Тәүге көндәрҙә үк был бригадаларҙың тракторсылары һоҡланғыс эш күрһәткестәре бирҙеләр. МТС-та ла:

— Хөрмәтуллин менән Колупаев иптәштәрҙең эше өсөн беҙ һис борсолмайбыҙ. Улар эшләйҙәр, ә бына башҡа 13 бригадала... — тиҙәр. Ана, шул —шул. МТС етәкселәре борсолмайҙар, алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен популярлаштыреү сараларын күрмәйҙәр һәм шуға күрә ҡалған бригадаларҙа етештереүсәнлек түбән, бөтә эске резервтарҙы файҙаланыу өсөн көрәшмәйҙәр. Машиналар социалистик һаҡлыҡҡа алынмаған. Ошо арҡала сәсеүҙең тәүге көндәренән үк машиналар ватыла, нормалар үтәлмәй, эш темпы бик түбән.

Ҡыйғы МТС-ы етәкселәре механизаторҙарҙың эшен планлаштырыуҙы баһаламайҙар. Уйлап һәм резервтарҙы иҫәпкә алып төҙөлгән план һәр төрлө эштең уңышлы үтәлеүен тәьмин итә. Быны ошо дәрәжәлектә аңламайҙар бында. МТС директоры иптәш Сляслин колхоздар менән өҫтәмә килешеүҙәрҙе төҙөү мәсьәләһен һанға һуҡмай.

МТС «Коммуна» колхозы менән шундай килешеү төҙөгән. Был килешеү буйынса колхозда яҙғы баҫыу эштәре тик 20 апрелдә генә башланырға тейеш. Ә колхоз сәсеү эшенә бик күп алда башланы. МТС иһә, ошо килешеүгә ҡарап бойҙай сәсеүҙе колхозға ҡарағанда бер аҙна һуңлап башланы. Шулай итеп, сәсеү ваҡытының иң ҡиммәтле көндәре формаль генә төҙөлгән өҫтәмә килешеүгә ҡарап бушҡа уҙғарылды. Бындай факттар Ҡыйғы МТС-ы хеҙмәтләндергән башҡа колхоздарҙа ла бар.

Механизаторҙарҙың хеҙмәте дөрөҫ ойошторолмау һөҙөмтәһендә Ҡыйғы МТС-ы хеҙмәтләндергән 15 колхозда бер аҙна буйына ни бары 508 гектар майҙанда ғына бойҙай һәм һоло сәселде. 405 гектар ер һөрөлдө. Ә бушҡа үткәрелгән һәр бер көн колхоздың 1951 йылғы урожайына ҙур зарар килтерә, хеҙмәт етештереүсәнлеген түбәнәйтә.

Ләкин Ҡыйғы районы етәкселәре лә механизаторҙарҙың хеҙмәтен дөрөҫ ойоштороу мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Дөрөҫ, райкомда ла һәм район Советында ла хәҙер бер кем дә юҡ. Бөтә етәкселәр ҙә колхоздарҙа. Район Советы исполкомы председателе иптәш Наймушина бер көндә бишәр-алтышар колхозда булып ҡайта. Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Ғималетдинов та колхоздарға бик йыш бара. Ләкин бер кем дә механизаторҙарҙың эше менән ҡыҙыҡһынмай. Район Советы етәкселәре колхоз правлениеләре менән генә эш итәләр. Ә тракторҙарҙы юғары етештереүсәнлекле итеп эшләтеү, сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн МТС-тың бөтә резервтарын файҙаланыу мәсьәләләренә иғтибар ителмәй. Ауыл хужалығы бүлеге етәкселәренең дә төп иғтибарын ошо мөһим хәл иткес шартҡа юнәлтеү сараһы күрелмәй.

Быйылғы яҙғы сәсеүҙе өлгөлө үткәреү өсөн Ҡыйғы районында бөтә мөмкинлектәр бар. Бәтәһенән элек, механизаторҙарҙың хеҙмәтен дөрөҫ ойоштороуға айырыуса иғтибар талап ителә. Сәбәбе бында баҫыу эштәренең 75 проценты МТС машиналары көсө менән башҡарыла. Бына ни өсөн механизаторҙарҙың хеҙмәтен ойоштороу — яҙғы баҫыу эштәренең уңышын хәл итәсәк.

Н. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партия мәғарифе райкомдың иғтибар үҙәгендә

ВКП(б)-ның Балтач районкомы ВКП(б) Үҙәк Комитетының марксизм-ленинизмды пропагандалау һәм коммунистарҙы идея-политик тәрбиәләү турандағы ҡарарҙарын [illegible] эштәр башҡара. Ағымдағы йылда үҙҙәренең политик белемдәрен күтәреү өсөн 692 коммунист эшләй. Районда «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса — 27, В. И. Лениндың, И. В. Сталиндың биографияһын өйрәнеү буйынса — 9 түңәрәк, 15 политик мәктәп һәм бер киске партия мәктәбе ойошторолған. 172 коммунист [illegible] партия тарихын үҙаллы өйрәнә.

Партия мәғарифе селтәрендә етәкселек итеү, коммунистарҙың теоретик кимәлдәрен күтәреү мәсьәләләре ВКП(б) райкомының һәм партия ойошмаларының [illegible] иғтибар үҙәгендә тора.

Ләкин шуға ҡарамаҫтан, партияның ҡайһы бер түбән ойошмалары был эшкә баштан уҡ тейешле иғтибар итеп еткермәнеләр.

Улар партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарға кампания формаһы эш итеп ҡарайҙар. [illegible]

[illegible]

— ВКП(б) район комитеты был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн бюро ултырышында партия ойошмалары секретарҙарының, пропагандистарҙың һәм консультанттарҙың отчеттарын тыңлап, тейешле ҡарарҙар ҡабул итте. [illegible] уҡыуҙарҙың барышын бөтә партия ойошмалары ла үҙҙәренең йыйылыштарында тикшерҙеләр. Партия ойошмаларының отчет-һайлау йыйылыштарында үҙҙәренең политик кимәлен күтәреү өсөндә ҡәнәғәтләнерлек эшләмәгән коммунистар ҡаты тәнҡитләнде, пропаганда эшендә булған айырым етешһеҙлектәр күрһәтелде.

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙы яҡшыртыу өсөн бөтәһенән дә элек, пропагандистарҙы һайлап алыу һәм уларҙы тәрбиәләү буйынса эште яҡшыртырға кәрәк булды. Хәҙер был йәһәттән күп кенә эштәр башҡарылды. Пропагандистарҙың күбеһе семинарҙарҙа ҡатнашып, үҙҙәренең квалификацияһын күтәрәләр һәм эш тәжрибәһе туплайҙар. [illegible] ВКП(б) Өлкә Комитеты [illegible] курстар пропагандистарға һәм партия ойошмалары секретарҙарына ҙур ярҙам булды. Хәҙер районда [illegible] 51 пропагандист эшләй.

Пропагандистарға теоретик һәм методик ярҙам күрһәтеүҙә семинарҙар мөһим сара булып тора. [illegible]

Пропагандистарға теоретик һәм методик ярҙам ойоштороу менән бер рәттән, ВКП(б) райкомы [illegible] тәрбиәләй. Пропагандистар [illegible] түңәрәк һәм политик мәктәптәрҙең эше менән ҡыҙыҡһыналар, занятиеләрҙә ҡатнашалар.

Ошоноң һөҙөмтәһендә ВКП(б) райкомы партия мәғарифе селтәрендә эштең торошон [illegible]

Партия мәғарифе етәкселек итеү буйынса райкомдың мөһим саралары [illegible]

Партия мәғарифе етәкселек итеү буйынса алып барылған был ойоштороу-методик эштәр күренекле һөҙөмтәләр бирҙе. [illegible] етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, һәр бер политик мәктәптә һәм түңәрәктәрҙә уҡыусы коммунистарҙың йомғаҡлау занятиеләрен үткәреү өсөн ныҡышмалы эш алып бара.

Н. Танаев,
ВКП(б)-ның Балтач райкомы секретаре.

Хеҙмәттә яңы уңыштарға өлгәшеү өсөн

Дмитриевка орденоносец совхозының партия ойошмаһы эргәһендәге агитколлективта 30-ҙан артыҡ агитатор иҫәпләнә. Агитаторҙар араһында эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм ауыл хужалығы специалистәре бар. Агитколлектив үҙенең бөтә көсөн совхоз алдында торған бурыстарҙы үтәүҙә администрацияға ярҙам итеү өсөн көрәшкә туплаған. Совхозда агитаторҙарҙы һәр ерҙә — баҫыуҙарҙа, малсылыҡ фермаларында, ремонт мастерскойында эшләүселәр араһында осратаһың. Улар эшселәр алдында лекциялар, доклад менән сығыш яһайҙар, беседалар үткәрәләр.

Хәҙер совхозда яҙғы сәсеү эштәре бөтә киңлеге менән йәйелдерелде. Был көсөргәнешле көндәрҙә совхоздың партия ойошмаһы үҙ эшен агитаторҙарға таянып хәл итә. Агитаторҙар баҫыу станларына, эштең иң ҡыҙыу урындарына ебәреләләр.

Агитколлектив үҙенең бөтә эшен план буйынса алып бара. План, ғәҙәттә, бер айға төҙөлә һәм партия йыйылышында раҫлана, һәр бер агитатор үҙенең эшен раҫланған планға таянып ойоштора.

Йәш агитаторҙарға партия ойошмаһы айырыуса ҙур иғтибар менән ҡарай. Улар үткәргән беседаларға, иптәштәрсә ярҙам күрһәтеү өсөн, партбюро членләре ебәрелә. Партия ойошмаһы агитаторҙарҙың эшенә ярҙам итеү маҡсаты менән малсылыҡ, игенселек темаларына һәм төрлө политик темаларға яҙылған китаптарҙан күргәҙмәләр ойоштора. Шулай уҡ агитаторҙар менән регуляр рәүештә семинар занятиеләре һәм тәжрибә уртаҡлашыу кәңәшмәләре үткәрелеп тора. Бындай саралар агитацияны хужалыҡ һәм политик бурыстарҙы үтәүгә ярҙам итерлек, маҡсатҡа йүнәлешле итеп ҡорорға мөмкинлек бирә.

Яҙғы сәсеү осоронда совхоз эшселәре араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Һәр бер бүлексә, һәр бер агрегат үҙенә айырым йөкләмәләр алды. Агитаторҙар һәр бер эшсенең үҙенә айырым социалистик йөкләмә алыуына өлгәшеү эшен башлап ебәреүсе булып торалар. Мәҫәлән, агитатор Будько тракторҙарҙы ремонтлауҙа эшләгән ваҡытта уҡ әле массовый-аңлатыу эше алып барыу менән генә сикләнмәйенсә үҙенең хеҙмәте менән дә юғары эш өлгөләре күрһәтте. Ул смена заданиеһен 150 — 200 процентҡа еткереп үтәп килде һәм совхозда беренсе булып үҙенә беркетелгән тракторҙы һәм тағылма инвентарҙарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алды. Иптәш Будько трактористар һәм ремонт эшселәре араһында ҡысҡырып газета уҡыуҙар ойоштора, улар менән Иван Бунеевтең һәм тлебеҙзең башҡа танылған трактористарҙың алдынғы эш методтарын өйрәнде. Сменанан һуң үҙенең бригадаһында эшләгән һәр бер эшсенең эш һөҙөмтәһен күрһәткес таҡтаһына яҙып барыуҙы ойоштора һәм бригадалағы башҡа работниктар менән берлектә стена газетаһы сығарып килде. Былай эшләү ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Агитатор иптәш Будько массовый эш алып барған трактористар ремонт осорондағы көүек, яҙғы баҫыу эштәрендә лә күптәргә өлгө күрһәтәләр.

Политик агитацияның көсөн күрһәткән икенсе бер миҫал килтерергә мөмкин. Совхоздың өсөнсө бүлексәһендә малдарҙы ҡарау эше насар ҡуйылған һәм мал аҙығы етерлек әҙерләнмәгәйне. Шул арҡала малдар ябыға башланы. Партия ойошмаһы был бүлексәгә агитатор Гончарукты беркетте. Иптәш Гончарук үҙенең эшен бүлексәләге малсылыҡ работниктарын партиябыҙҙың һәм хөкүмәтебеҙҙең малсылыҡты үҫтереү буйынса сығарған мөһим ҡарарҙары менән таныштырыуҙан башланы. Унан һуң бүлексә работниктары араһында малдарҙы тәрбиәләү эшен яҡшыртыу һәм мал үҫтереү планын арттырып үтәү өсөн социалистик ярыш ойошторолдо. Һөҙөмтәлә бүлексә үҙенең эшендә яҡшы күрһәткестәргә өлгәште. Хәҙер 3-сө бүлексәнең малсылыҡ фермаһы совхоздың иң алдынғы фермалары сафына баҫты. Март айында һөт һауып алыу планы 125 процентҡа үтәлде.

Совхоз эшселәре араһында агитатор иптәш Ғатауллин үҙенең яҡшы эшләүе менән танылды. Эшселәр уға ихтирам менән ҡарайҙар. Иптәш Ғатауллин үҙенең беседаларын күп ваҡытта урындағы факттар—совхоз, район, республика тормошонан алынған миҫалдарға бәйләп үткәрә. Был совхозда үҙенең эшен һәйбәт башҡарған агитаторҙарҙы тағы ла бик күп күрһәтергә мөмкин.

Партия ойошмаһының секретаре иптәш Горшинин совхоздың көндәлек тормошо һәм эше менән таныштырыу, беседала ҡуллаңырға мөмкин булған урындағы факттарҙы күрһәтеү, кәңәштәр биреү һәм яңы бурыстар ҡуйыу өсөн бик йыш ҡына агитаторҙарҙы йыйып һөйләшә.

Шулай берҙәм көс менән Дмитриевка совхозының агитколлективы һәм коммунистәре хеҙмәттә яңы уңыштарға өлгәшеү өсөн көрәшәләр.

М. Баранов,
ВКП(б)-ның Өфө районы пропагандисы.

Стена газетаһы—агитацияның көслө ҡоралы

Бөтә политмассовый эште беҙ производство, техник һәм политик темаларға регуляр рәүештә лекция һәм докладтар уҡыу, стена газетаһы, күргәҙмә агитация аша агитколлектив ярҙамында алып барабыҙ. Беҙҙең агитколлективта 48 агитатор иҫәпләнә. Уларҙың бөтәһе лә производствола эшләй. Агитмассовый эш планы буйынса агитаторҙар менән айына 3 — 4 тапҡыр семинарҙар һәм инструктив кәңәшмәләр үткәрелә. Уларҙа агитаторҙарға беседа үткәреү өсөн темалар бирелә, әҙәбиәт һәм материалдар күрһәтелә. Беседаларға темалар һайлағанда, мин, агитколлектив етәксеһе булараҡ, ВКП(б) ҡала комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге төҙөгән тематиканан сығып эш итәм. Бынан башҡа, беҙгә тематиканы үҙебеҙҙең предприятие тормошонан һайлап алырға ла тура килә.

Семинарҙарҙа беҙ агитаторҙарҙың эш тәжрибәләрен уртаҡлашыу практикаһын да ҡулланабыҙ. Был беҙгә бик файҙалы. Сөнки агитаторҙар унда үҙҙәренең ыңғай эштәрен, масса араһында беседа үткәреү тәжрибәләрен һөйләйҙәр. Партия ойошмаһы шулай уҡ йәш эшселәрҙең дөйөм торлаҡтарында агитмассовый эште йәйелдереүгә лә ҙур әһәмиәт бирә. Һәр бер дөйөм торлаҡта билдәләнгән агитаторҙар политик-массовый эш алып баралар. Улар өсөн айырым эш планы төҙөлә.

Стена газетаһы — агитмассовый эштең бер формаһы. Беҙ быға бик ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Төҙөлөш управлениеһе буйынса беҙ аҙна һайын бер тапҡыр 4 дана стена газетаһы сығарабыҙ. Уларҙың береһе управлениела, ә ҡалғандары төҙөлөш участкаһына таратыла. Бынан башҡа дөйөм торлаҡ йорттарында һәм төҙөлөш участкаларында боевой листоктар сығарыла. Стена газетаһын 4 данала сығарыу ҙур әһәмиәткә эйә. Сөнки был ҡыҫҡа ваҡыт эсендә эшселәрҙең барыһының да уҡып сығыуына ярҙам итә. Унда бигерәк тә производство күрһәткестәрен яҡшыртыуға, төҙөү эштәренең сифатын күтәреүгә, алдынғы эш методтарын таратыуға йүнәлдерелгән мәсьәләләр яҡтыртыла. Газета производствола артта ҡалыусыларҙы һәм уларҙың етешһеҙлектәрен асып һала, алдынғылар сафына баҫыу өсөн уларға ярҙам итә.

Хәҙер ВКП(б) ҡала комитеты политик-массовый эште яҡшыртыу маҡсатында дөйөм агитаторҙар кәнә билдәләнә. Ул көндә бөтә урындарҙа ла агитаторҙар беседалар үткәрәләр, массовый эш алып баралар.

Ләкин беҙҙең эшебеҙҙә әле етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел. Күп кенә агитаторҙар эшселәр менән беседаны йөкмәткеле итеп үткәрмәйҙәр. Уларҙың беседалары, күбеһенсә, политик информациялар рәүешендә генә була.

Коллектив йыллыҡ планды 5 декабргә үтәү өсөн социалистик йөкләмә алды. Был йөкләмәне срогынан алда үтәү маҡсатында, хәҙер Май алды ярышы йәйелдерелде. Был эштә, билдәле, беҙҙең агитколлектив ҙур роль уйнай. Үҙенең бөтә һалатлеген планды срогынан алда үтәүгә йүнәлтә.

А. Торшин,
Октябрьский ҡалаһы, 2-се төҙөлөш управлениеһе партия ойошмаһы секретаре.

1951 йылдың I кварталында Башҡорт АССР-ында промышленность, капиталь төҙөлөш һәм тауар әйләнеше буйынса государство планының үтәлеш йомғаҡтары тураһында

Башҡорт АССР-ы Статистика Управлениеһенең белдереүе

1951 йылдың I кварталында промышленность, капиталь төҙөлөш һәм тауар әйләнешен йәйелдереү эше Башҡорт АССР-ы буйынса түбәндәге мәғлүмәттәр менән характерлана:

I. ПРОМЫШЛЕННОСТЬ

Промышленностең валовой продукцияһы буйынса производство планы 1951 йылдың I кварталында министерстволарҙың һәм ведомстволарҙың Башҡорт АССР-ы территорияһындағы предприятиеләре тарафынан түбәндәгесә үтәлде:

	1951 йылдың I кварталында пландың үтәлеше процентта
Ҡара металлургия министерствоһы предприятиеләре	98
Төҫлө металлургия министерствоһы предприятиеләре	107
Нефть промышленносе министерствоһы предприятиеләре	98
Электр станциялары министерствоһы предприятиеләре	109
Химия промышленносе министерствоһы предприятиеләре	114
Электр промышленносе министерствоһы предприятиеләре	107
Связь средстволары промышленносе министерствоһы предприятиеләре	102
Станоктар төҙөү министерствоһы предприятиеләре	105
Төҙөлөш һәм юл машиналары төҙөү министерствоһы предприятиеләре	102
Төҙөлөш материалдары промышленносе министерствоһы предприятиеләре	117
шул иҫәптән Башҡорт АССР-ы төҙөлөш материалдары промышленносе Управлениеһе предприятиеләре	104
Урман һәм ҡағыҙ промышленносе министерствоһы предприятиеләре	97
шул иҫәптән Башҡорт АССР-ы Урман промышленносе министерствоһы предприятиеләре	87
Еңел промышленность министерствоһы предприятиеләре	104
шул иҫәптән Башҡорт АССР-ы Еңел промышленносе министерствоһы предприятиеләре	108
Ит һәм һөтсөлөк промышленносе министерствоһы предприятиеләре	102
Аҙыҡ промышленносе министерствоһы предприятиеләре	91
шул иҫәптән Башҡорт АССР-ы Аҙыҡ промышленносе министерствоһы предприятиеләре	108
Балыҡ промышленносе министерствоһы предприятиеләре	120
Башҡорт АССР-ы Урындағы промышленность министерствоһы предприятиеләре	103
Урындағы яғыулыҡ промышленносе министерствоһы предприятиеләре	93
шул иҫәптән Башҡорт АССР-ы урындағы яғыулыҡ промышленносе Управлениеһе предприятиеләре	93
Башпромсовет артелдәре	100,2
Башлеспромсоюз артелдәре	100,2
Башлесхимпромсоюз артелдәре	110
Башкоопинсоюз артелдәре	112

Башҡорт АССР-ы территорияһындағы промышленность тарафынан 1951 йылдың I кварталында валовой продукция етештереү планы 99 процентҡа үтәлде; 1950 йылдың шул уҡ осоро менән сағыштырғанда, валовой продукция күләме 14 процентҡа үҫте.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы ҡарамағындағы промышленность тарафынан 1951 йылдың I кварталында валовой продукция етештереү планы 97 процентҡа үтәлде; 1950 йылдың шул уҡ осоро менән сағыштырғанда, валовой продукция күләме 18 процентҡа үҫте.

I кварталда планды валовой продукция буйынса арттырып үтәү менән бер уҡ ваҡытта, айырым министерстволар һәм ведомстволар государство планын ассортимент буйынса үтәп еткермәнеләр: Башҡорт АССР-ы Урындағы промышленность министерствоһы элгәргестәр, тимер карауаттар, балсыҡтан яһалған һауыт-һабалар; төҙөлөш материалдары промышленносе Управлениеһе — цемент һәм черепица етештереү буйынса; Промсовет — мебелдәр, ойоҡ-ойоҡбаш изделиеләре, аяҡ кейеме, әҙбиз һәм кирбес етештереү буйынса; Башлеспромсоюз — арбалар, сана табандары, мебелдәр етештереү һәм эшкә яраҡлы ағас һәм утын әҙерләү һәм ташыу буйынса; Башлесхимпромсоюз — арбалар, дегет, ыҫмала етештереү, утын әҙерләү һәм ташыу буйынса; Башкоопинсоюз — белье трикотажы, ойоҡ-ойоҡбаш изделиеләре етештереү һәм аяҡ кейемдәре ремонтлау буйынса планды үтәп еткермәнеләр.

Республика буйынса 1951 йылдың I кварталында, дөйөм алғанда, промышленность продукцияһының мөһим төрҙәрен етештереү планының үтәлеше һәм продукция күләменең үҙгәреше, 1950 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда, түбәндәге мәғлүмәттәр менән характерлана:

	1951 йылдың I кварталында пландың үтәлеше процентта	1951 йылдың I кварталы 1950 йылдың I кварталына ҡарағанда процентта
Суйын	99	109
Ҡорос	97	106
Прокат	97	108
Баҡыр	108	68
Электр энергияһы	107	110
Нефть	102	119
Бензин	96	90
Керосин	92	120
Каустик сода	101	87
Көкерт кислотаһы	105	104
Металл ҡырҡыусы станоктар	101	138
Телефон аппараттары	102	119
Аҙ көслө ток шнурҙары	121	108
Электр лампалары	99	169
Һығылмалы валдар	102	118
Металл әйләр	100,8	106
Яҙыу машиналары	115	135
Тәҙрә быяалары	119	122
Төҙөлөш кирбесе	65	153
Әҙбиз	68	205
Алебастр	79	126
Фанера	104	136
Шырпы	114	116
Бысылған материалдар	90	117
Башҡорт АССР-ы Урман промышленносе министерствоһы буйынса эшкә яраҡлы ағас сығарыу	100,2	157
Киже мамыҡ туҡымалары	100,5	134
Йөн туҡымалар	119	136
Күн	101	125
Күндән тегелгән аяҡ кейемдәре	94	132
Өҫкө трикотаж һәм трикотаж бельеләр	92	112
Ойоҡ-ойоҡбаш изделиеләре	91	120
Спирт	103	157
Мал майы	95	91
Макарон изделиеләре	104	115
Ит	104	115
Витаминдар	140	203

1951 йылдың I кварталында Башҡорт АССР-ы территорияһындағы айырым трестар һәм предприятиеләр тарафынан план үтәлеше түбәндәге мәғлүмәттәр менән характерлана:

1. Продукцияның натуралата етештереү планын үтәү менән бер рәттән, валовой продукция буйынса планды түбәндәге трестар һәм эре предприятиеләр үтәнеләр:

	1951 йылдың I кварталында пландың үтәлеше процентта
Красноусол быяла заводы	128
Тау оборудованиеләре заводы	121
«Красный ключ» ҡағыҙ фабрикаһы	120
Черниковск фанера комбинаты	119
Таутөмән керамик-торбалар заводы	119
Сүпрә заводы	117
Түбән-Троицк буҫтау фабрикаһы	116
1 Май исемендәге шырпы фабрикаһы	115
Яҙыу машиналары заводы	115
8-се номерле ярма ярыу заводы	114
Ишембай Үҙәк Электр Станцияһы	111
Благовещен машиналар төҙөү заводы	111
1-се номерле ГЭС	110
1-се номерле ТЭЦ	109
Стәрлетамаҡ тегеү фабрикаһы	108
Өфө механика заводы	106
Киже-мамыҡ комбинаты	104
«Ишембайнефть» тресы	104
Өфө ликер-араҡы заводы	103
«Туймазынефть» тресы	102

2. Өфө кондитер фабрикаһы, 3-сө номерле тегеү фабрикаһы, ҡамыт-ыңғырсаҡ фабрикаһы, Бәләбәй ликер-араҡы заводы, радиомеханика заводы, «Красный пролетарий» заводы, Һығылмалы валдар заводы һәм ҡайһы бер башҡа предприятиеләр валовой продукция буйынса планды арттырып үтәү менән бергә, государство планы тарафынан ҡаралған продукцияның мөһим төрҙәре планын натуралата етештереү буйынса үтәмәнеләр.

3. Айырым предприятиеләр һәм трестар I квартал планын мөһим изделиеләр буйынса үтәмәү генә түгел, ә валовой продукция буйынса ла үтәмәнеләр. Бындай предприятиеләргә, атап әйткәндә, Өфө нефть эшкәртеү заводы, Белорет тимер-сыбыҡ заводы, төҙөлөш машиналары заводы, Стәрлетамаҡ таҡта ярыу заводы, Өфө паровоздар ремонтлау заводы, суднолар ремонтлау заводы, «Дубитель» заводы, 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы, Сталин исемендәге завод, Белорет металлургия комбинаты, Өфө таҡта ярыу заводы, Бөрө араҡы заводы, «Маслопром» тресы, «Росглавхлеб» тресы инәләр.

II. КАПИТАЛЬ ТӨҘӨЛӨШ

Башҡорт АССР-ы территорияһындағы бөтә төҙөлөштәр тарафынан 1951 йылдың I кварталында капитал һалыу планы 79 процентҡа, шул иҫәптән Ҡара һәм Төҫлө металлургия министерстволарының төҙөлөштәре тарафынан 93 процентҡа, нефть промышленносе — 83 процентҡа, күмер промышленносе — 80 процентҡа, урман промышленносе — 69 процентҡа, электр станциялары — 49 процентҡа үтәлде.

Капитал эштәрҙең йыллыҡ планы 1951 йылдың 1 апреленә бөтә төҙөлөштәр тарафынан 14 процентҡа, шул иҫәптән торлаҡ төҙөлөшөнә капитал һалыу планы 20 процентҡа үтәлде.

1951 йылдың I кварталы өсөн капитал һалыу күләме, 1950 йылдың I кварталына ҡарағанда, Башҡорт АССР-ы буйынса, дөйөм алғанда, 142 процент, шул иҫәптән Күмер промышленносе министерствоһы төҙөлөштәре буйынса 350 процент, нефть промышленносе буйынса — 132 процент, электр станциялары буйынса — 120 процент, ҡара һәм төҫлө металлургия буйынса — 120 процент һәм урман промышленносе буйынса — 94 процент тәшкил итте.

Торлаҡ төҙөлөшөнә капитал һалыу планы күләме 1951 йылдың I кварталы өсөндә, 1950 йылдың I кварталына ҡарағанда, ике тапҡырҙан артығыраҡ үҫте.

Бөтә государство предприятиеләре һәм учреждениеләре тарафынан торлаҡ майҙандарын эксплуатацияға индереү, 1950 йылдың I кварталына ҡарағанда, өс тапҡырҙан артыҡ.

III. ТАУАР ӘЙЛӘНЕШЕ

1951 йылдың I кварталында тауар әйләнеше планы Башҡорт АССР-ы буйынса 92 процентҡа, шул иҫәптән дөйөм туҡланыу буйынса 97 процентҡа үтәлде.

1951 йылдың I кварталында тауар әйләнеше планы Сауҙа министерствоһы буйынса 90 процентҡа үтәлде.

Кооператив сауҙа буйынса 1951 йылдың I квартал планы 90 процентҡа, шул иҫәптән Башпотребсоюз буйынса — 89 процентҡа, Башпромсовет буйынса — 91 процентҡа һәм инвалидтар кооперацияһы буйынса — 104 процентҡа үтәлде.

1951 йылдың I кварталында бөтә министерстволарҙың ОРС-тары буйынса тауар әйләнеше планы 95 процентҡа һәм промышленность министерстволарының махсуслаштырылған ваҡлап һатыу селтәре буйынса 103 процентҡа үтәлде.

Киң ҡулланыу тауарҙарына государствоның ваҡлап һатыу хаҡтарын яңынан арзанайтыу 1951 йылдың 1 мартынан бирле халыҡтың һатып алыу һәләтлеген күтәрҙе һәм колбаса изделиеләрен, һөт продукттарын һәм кондитер изделиеләрен, туҡымаларҙы, тегеү изделиеләрен, аяҡ кейемдәрен, тәмәке изделиеләрен һәм парфюмерияны ваҡлап һатыуҙы байтаҡ арттырыуға мөмкинлек бирҙе.

Башҡорт АССР-ы Статистика Управлениеһе.

Финанс органдарының социалистик ярышы йомғаҡтары

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы ошо йылдың 12 апрелендә финанс органдарының социалистик ярышы йомғаҡтарын тикшерҙе.

Республикабыҙҙың 17 район һәм ҡала финанс бүлеге 1951 йылдың I кварталы планын арттырып үтәне.

Министрҙәр Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағы һәм беренсе премия I квартал планын 119,2 процентҡа үтәгән Белокатай районына бирелде (район Советы исполкомы председателе иптәш Шевелев, район финанс бүлеге мөдире иптәш Шиков). I квартал планын 118,9 процентҡа үтәгән Өфө районына (район Советы исполкомы председателе иптәш Ососкова, район финанс бүлеге мөдире иптәш Самоделкин) икенсе премия һәм Башҡорт АССР-ы Финанс министерствоһының күсмә Байрағы бирелде. Өсөнсө премия Саҡмағош, Туймазы, Оло Теләк, Ҡалтасы һәм Асҡын райондары алды.

Шулай уҡ Министрҙәр Советы Ҡалтасы, Шаран райондары һәм Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалалары финанс бүлектәренең яҡшы эшләүен билдәләне.

С. Рощина.

ПРОФСОЮЗ ТОРМОШО

...ЭТСЭНДӘРҘЕҢ ИНДИВИДУАЛЬ БАҠСАСЫЛЫҒЫНА ИҒТИБАРҘЫ КӨСӘЙТӘЙЕК!

[illegible] әҙыҡ ресурстары тулыланды... [illegible] индивидуаль бак... [illegible] урын алып торалар. [illegible] Башкортостан нефть про... [illegible] 4362 [illegible] картоф, 72 тонна кәбестә, 105 [illegible] һәм 205 тонна [illegible] үҫтерел алдылар. [illegible]

[illegible] булышы инвалидтәре, Ватан һу... [illegible] һәлак булган воиндәрҙең [illegible] айырым иҫемлеккә алынып, [illegible] һәм картоф орлоктары табыуҙа [illegible] ойошторолдо. Уларға «Башнефть» [illegible] совхоздарындағы запастар... [illegible] һәм картоф орлоктары ме-

[illegible] йәки аҡсалата ярҙам күрһәтеләсәк. [illegible]

Индивидуаль баҡса ерҙәре буйынса хужалыҡ ойошмалары менән төҙөлгән коллектив договорҙар буйынса тракторҙар менән һөрөләсәк һәм тырматыласаҡ. [illegible]

Профсоюз ойошмалары һәм уларҙың баҡсасылыҡ комиссиялары [illegible] баҡсасылар араһында массовый-аңлатыу эшен киң йәйелдерәләр. Ишембай, Благовещен, Октябрьский [illegible] профсоюз ойошмалары эргәһендәге баҡсасылыҡ комиссиялары был эште айырыуса яҡшы алып баралар.

[illegible] профсоюз бюджетенан 4600 һум аҡса бүленде. [illegible]

Бер бер баҡсасының картоф һәм [illegible] юғары урожай алыуына ирешеү профсоюз ойошмаларының һәм баҡсасылыҡ комиссияларының иң мөһим бурыстары булып тора.

Ғ. Рыбин,
нефтселәр профсоюзының Башкортостан өлкә комитете инструкторы.

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНӘ

Быйылғы навигацияла беҙҙең коллектив коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә бөтәһе 100 мең кубометр ағас материалдары ағыҙырға тейеш. Леспромхоз эшселәре һәм инженер-техник работниктәре был бурысты уңышлы үтәү өсөн үҙҙәренең бөтә көстәрен һалып эшләйҙәр. Һал ағыҙыуҙың тауге көндәренән үк партия ойошмаһы һәм леспромхоз администрацияһы хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу һәм агитмассовый эште йәйелдереү сараларын күрҙе. Махсус эш графигы төҙөлдө, бөтә участкаларҙа ла коммунистар иң яуаплы һәм хәл иткес эштәргә ҡуйылдылар. Һөҙөмтәлә беҙҙең коллектив һал ағыҙыу эшендә ҙур уңышлыҡтарға өлгәште. Леспми эшселәрҙән Исмәғил Хәлилуров, Шакир Хәбибрахманов, Зәки Ғиззәтуллин, Кәрим Хажиев, Ғәзел Садриев һәм башҡа бик күп кенә иптәштәр үҙҙәренең көндәлек нормаларын 150—180 процентҡа үтәйҙәр.

Бындай стахановсылар леспромхозда күп. Улар ағас материалдарын илебеҙҙең бөйөк төҙөлөштәренә срогынан алда еткереү өсөн көрәшәләр.

А. Миндияров,
Таныш леспромхозының өлкән бухгалтеры.

Колхоздарға фәнни ярҙам

Башкортостан малсылыҡ тәжрибә станцияһы специалистәренең фәнни-техник кәңәшмәһе булып үтте. Кәңәшмәлә тәжрибә станцияһы специалистәренең республика колхоздарына практик ярҙам күрһәтеү мәсьәләһе ҡаралды һәм эш планы ҡабул ителде.

Был план нигеҙендә колхоздарҙа малсылыҡты үҫтереү, токомсолоҡто яҡшыртыу һәм продуктивлекте күтәреү буйынса алдынғы тәжрибәләрҙе индереү саралары күреләсәк. Һыйыр һауыуҙы яҡшыртыу, быҙауҙарҙы тәрбиәләү, мал токомдарын яҡшыртыу, көнбағышты силос өсөн вика менән ҡушып сәсеү, бесән өсөн донник һәм башҡа үләндәрҙе сәсеү, йәшел конвейер ойоштороу һәм башҡалар буйынса колхоздарҙа һәм совхоздарҙа тәжрибәләр үткәреләсәк.

Х. Кәлимуллина.

Башкорт музыка культураһы тураһында лекция-концерт

22 апрелдә Өфөлә Башгосфилармония залында башкорт музыка культураһы тураһында лекция-концерт булды.

Кисәлә ҡатнашыусыларға музыковед Л. П. Лебединский башкорт музыка культураһы тураһында лекция уҡыны. Ул үҙенең лекцияһында башкорт музыка культураһының әленән-әле үҫә барыуына, шулай уҡ башкорт композиторҙары Әхмәтов, Вәлиев, Мортазин, Заимов, Исмәғилов, Кәримов һәм башҡаларҙың эшмәкәрлегенә туҡталды. Бер үк ваҡытта Л. П. Лебединский музыка культураһының башҡа жанрҙары тураһында һөйләп, был өлкәләге ыңғай яҡтарҙы билдәләп үтте һәм етешһеҙлектәрҙе күрһәтте.

Лекциянан һуң РСФСР-ҙың атҡаҙанған артистәрә Ғ. Хәбибуллин, Х. Рәлимов, башкорт опера һәм балет театры солисткаһы М. Әхмәтьянова, композитор Т. Кәримов, Башгосфилармония артисе-ҡурайсы А. Шиҙмәев һәм филармонияның хоры сығыш яһаны.

И. Бикмөтов.

Клубтың эше баҫыуға күсерелде

Учалы районының Ахун ауыл клубы яҙғы сәсеү башланыу менән үҙенең эшен баҫыуға күсерҙе. Колхоздың баҫыу стандары, трактор вагончиктәре матур итеп йыһазландырылды. Унда төрлө политик, фәнни китаптар, художестволы әҙәбиәт, газета-журналдар, шахмат-шашка һәм башҡа музыка, уйын ҡоралдары ла бар.

Клуб эргәһендә биш кешенән торған агиткультбригада төҙөлдө. Ул бер шаршаулы пьесалар һәм концерт номерҙәре менән сығыштар яһай.

Ә. Апсаттарова.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Картофты ашламалар менән бергә ултыртыу

[illegible], әрләтелгән күпселек колхозда картоф ултыртыу майҙаны 70—80 [illegible] тәшкил итә. Тимәк, был майҙанды [illegible] кәм иҫәбендә 2 мең тоннa тиреҫ [illegible] төрлө ашламалар әҙерләргә [illegible]. Бәрәр сәбәп менән колхозда был [illegible] ашламалар әҙерләргә мөмкинлек [illegible], ашламаларҙы картоф ултыртыу [illegible] оялырына индереү методын [illegible] яҡшы була. Оялап файҙаланыуҙы ашламаға ҙур экономия яһай [illegible] эшкә ашлау майҙанын 3—4 [illegible] арттырырға мөмкинлек бирә.

[illegible] тәжрибә баҫыуында түбәндәге һыу ҡулланылды. Бер участкала көҙ [illegible] һөрелгән ергә яҙ кенә культивация [illegible] сәстә, унда гектарға 3 центнер [illegible] аммония сульфаты, 3 центнер [суперфос]фат, 2 центнер калий тоҙо ин[деререп] һәм картоф ултыртылды. Икенсе [участка]ла шундай уҡ ашламалар 3 тап[ҡыр кәм] норма менән ҡулланылды [һәм] картоф ояларына индерелде. Һө[ҙөмтә] [illegible] булды. Беренсе участкаға ҡарағанда, икенсе участкала һәр гектарҙа [illegible] күберәк картоф урожайы [illegible].

[illegible] районы Тельман исемендәге колхоз [illegible] Исаев етәкселек иткән баҡса бригадаһы 6 гектар майҙанда [illegible] картоф ояларына тиреҫ индерҙе. Көҙ кенә был майҙандың һәр гектарынан 368-әр центнер, ә дөйөм майҙанда тик 312-шәр центнер картоф алынды. Шул уҡ районың Дзержинский исемендәге колхозында картоф ояларына ҡош тиҙәген индереү урожайҙы 23 процентҡа күтәрҙе.

Оялап индереү өсөн тиреҫ, торф, көл, ҡош тиҙәге, минераль ашламаларҙы ҡулланырға мөмкин. Ләкин уларҙы картоф орлоғо менән йәнәшә һалырға ярамай. Бында ашламалар бураҙна төбөнә һалыналар, ә картоф бураҙнаның уртаһына өлөшә яткырып ултыртыла. Бәрә тәжрибә баҫыуының һынауҙары картоф аҫтына оялап индереү өсөн түбәндәге нормала ашламалар ҡулланыуҙы тәҡдим итә: һәр бер ояға серегән тиреҫ 250 грамм, ҡош тиҙәге 10—12 грамм, аммоний сульфаты, суперфосфат, калий тоҙо ашламалары 1,5—2-шәр грамм, көл 8—10 грамм һалына. Әгәр ҙә бер гектар майҙанға 40—42 мең төп картоф ултыртылһа, юғарыла күрһәтелгән норма иҫәбе менән һәр гектарға серегән тиреҫ 8—10 центнер, минераль ашламалар 50—100-әр килограмм, көл 3—4 центнер, ҡош тиҙәге 4—5 центнер талап ителә. Көл, ҡош тиҙәге һәм минераль ашламаларҙы серегән тиреҫ менән ҡатнаштырып индереү тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ.

Агроном **А. Әхмәров.**

„Кыҙыл Башкортостан" материалдары буйынса

„Һыйҙар артынан ҡыуыу нәмәгә килтерҙе"

[illegible] исем менән «Кыҙыл Башкортостан» газетаһының 59-сы номерында [illegible] МТС-ы етәкселәренең (Бүздәк ра[йоны]) тракторҙарҙы ремонтлау планының [үтәлеше] тураһында дөрөҫ булмаған мәғлүмәт биреүҙәре һәм эштең сифаты өсөн [illegible] ойоштормауҙары тураһында хәбәр [биреле]йне. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның [illegible] район комитеты редакцияға түбәндәге [illegible] бирҙе:

«Һыйҙар артынан ҡыуыу нәмәгә килтерҙе» тигән мәҡәлә «Кыҙыл Башкортостан» газетаһында баҫылған хәбәр ВКП(б) район комитетының бюро ултырышында һәм МТС советында тикшерелде. ВКП(б) райкомы бюроһы МТС директоры иптәш Захаровҡа тракторҙарҙы ремонтлау сифатын тикшереү ваҡытында асылған етешһеҙлектәрҙе тиҙ бөтөрөүгә тәҡдим итте. 5 апрелдә үткәрелгән тикшереү ваҡытында «Кыҙыл Башкортостан» газетаһында күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙең бөтөрөлгәнлеге асыкланды.

МЕХАНИЗАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА

Трактор агрегаттарының эшен сәғәт графиге буйынса ойоштороу

Трактор агрегаттарының эшен сәғәт графиге буйынса ойоштороу машина-трактор паркының хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә ҙур резервтарҙың береһе булып тора. 1950 йылда алдынғы бригадаларҙа сәғәт графигын ҡулланыу тәжрибәһе машина-трактор паркының хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә һәм файҙаланыуҙа уның ғәйәт ҙур әһәмиәтен бөтә тулылығы менән расланы. Яҙғы сәсеү ваҡытында сәғәт графиге буйынса эшләү яҙғы баҫыу эштәренең сроктарын кәметеүҙә һәм сәсеүҙе яҡшы агротехник сроктарҙа үткәреүҙә ҙур роль уйнай.

Приют МТС-ының механизаторҙары былтыр агрегаттарҙың сәғәт графиге буйынса эшләүен киң ҡулландылар һәм яҙғы баҫыу эштәре осоронда гүзәл уңыштарға өлгәштеләр. Трактор эштәренең бөтә төрҙәре лә колхоздар менән төҙөлгән договорҙарҙа билдәләнгән сроктарҙа үтәлделәр. Һәр бер шартлы тракторға тәүлек буйына эшләп сығарыу 6,6 гектар тәшкил итте. Тракторист-комсомолец иптәш Н. Мифтахов «Яңы тормош» колхозында С—80 тракторында сәғәт графиге менән яҙғы осорҙа 32 смена эшләне һәм йомшаҡ һөрөүгә әйләндереп иҫәпләгәндә 769 гектар, йәғни уртаса алғанда сменаға норма менән билдәләнгән 16 гектар урынына 24 гектар ер эшкәртте. Тракторист М. Шәрәфетдинов СТЗ — НАТИ тракторында көн һайын сменаға, норма менән ҡаралған 7,8 гектар урынына, 10,5 гектарға тиклем ер эшкәртте. Бындай миҫалдарҙы бик күп килтерергә мөмкин. Уларҙың бөтәһе лә сәғәт графиге менән эшләүҙең хеҙмәт етештереүсәнлеген 1,5—2 тапҡырға арттырыу мөмкинлеген, тимәк, яҙғы эштәрҙе үткәреү сроктарын 1,5—2 тапҡырға кәметеү мөмкинлеген күрһәтәләр.

Сәғәт графиге менән эшләүҙе бөтә трактор бригадаларына ла индерергә кәрәк. Алдынғы механизаторҙарҙың эш тәжрибәләренән күренгәненсә, агрегаттарҙың эшен сәғәт графиге буйынса ойошторған ваҡытта түбәндәге мәсьәләләргә айырыуса иғтибар биреү талап ителә: 1) агрегаттарҙың эшкә яҡшы әҙерләнеүе; 2) участкаларҙы әҙерләү; 3) агрегат работниктәрен һәм хеҙмәтләндереүсе персоналды әҙерләү; 4) сәғәт графигын дөрөҫ төҙөү; 5) эш ваҡытында агрегатты хеҙмәтләндереүҙе аныҡ ойоштороу; 6) трактор ҡеүәтен тулыһынса файҙаланыу; 7) эш процессында график менән билдәләнгән заданиеларҙы үтәүгә даими контроль урынлаштырыу һәм ватылыуҙарҙы, буш тороу ваҡиғаларын үҙ ваҡытында иҫкәртеү.

Үҙенән-үҙе аңлашылы, сәғәт графиге менән эшләү өсөн трактор агрегаты яҡшы әҙерләнгән булырға тейеш. Тракторҙарҙың һәм тағылма ауыл хужалығы машиналарының техник торошо агрегаттың бөтә смена буйынса өҙлөкһөҙ эшләүен тәьмин итәсәк. Шуға күрә бөтә машиналарҙы ла юғары сифатлы итеп ремонтларға һәм баҫыу эштәре осоронда уларға үҙ ваҡытында тейешле техник тәрбиә булдырырға кәрәк.

Агрегаттарҙы комплектовать иткән ваҡытта тракторҙарҙың ҡеүәтен максималь файҙаланыу күҙ уңында тотолорға тейеш.

Трактор агрегатының етештереүсәнлеге уның күпме эшләүенә генә түгел, бәлки тракторҙарҙы тағылма машиналар менән тулыһынса тәьмин итеүгә, агрегаттарҙы дөрөҫ комплектовать итеүгә лә бәйләнгән. Практика, агрегаттарҙың түбәндә күрһәтелгән төрҙәренең айырыуса етештереүсәнлекле булыуын күрһәтте.

Сәсеү эштәрендә СТЗ тракторы бер трактор һәм ике ат сәскесе, СТЗ—НАТИ һәм ДТ — 54 тракторҙары өс трактор һәм бер ат сәскесе менән.

Культивацияла СТЗ тракторы бер культиватор, СТЗ—НАТИ һәм ДТ—54 тракторҙары өс культиватор менән.

Дымды һаҡлауҙа СТЗ тракторы 16—18 звено тырма һәм СТЗ—НАТИ һәм ДТ—54 тракторҙары 36—40 звено тырмалар менән.

Һөрөүҙә С—60 һәм С—65 тракторҙары биш корпуслы ике һабан һәм дүрт звено тырма, СТЗ—НАТИ, ДТ—54 тракторҙары биш корпуслы бер һабан һәм ике звено тырма һәм С—80 тракторы 12—13 корпуслы һабан һәм 6 звено тырма менән.

Юғарыла күрһәтелгән агрегаттарҙа эшләгәндә тағылма ауыл хужалығы машиналарының тартыуға ҡаршылыҡ күрһәтеүе агрегатҡа икенсе-өсөнсө тиҙлектә эшләргә, һәм тракторҙың ҡеүәтен 85—95 процентҡа файҙаланырға мөмкинлек бирә.

Эш шарттарына ҡарап хеҙмәт етештереүсәнлеген тракторҙың тиҙлектәрен дөрөҫ үҙгәртеү иҫәбенә күтәреүгә өлгәшергә кәрәк. Иҫәпләүҙәргә ҡарағанда беренсе тиҙлектә эшләгәндә, СТЗ тракторының көндәлек хеҙмәт етештереүсәнлеге 23—24 процентҡа кәмей, яғыулыҡты тотоноу арта. Шуға күрә СТЗ тракторҙары менән йомшаҡ тупраҡлы ерҙәрҙе эшкәрткән ваҡытта беренсе тиҙлектә эшләүгә юл ҡуйылмаҫ өсөн, уларҙың тәгәрмәстәрен ушырателәр менән тәьмин итергә кәрәк.

Сәғәт графиге менән эшләгән ваҡытта участкаларҙы алдан ентекле әҙерләү ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Трактор агрегаттарының туҡтауһыҙ эшләүе һәм улар бер урындан икенсе урынға йыш күсеп йөрөмәһендәр өсөн, аллан уҡ, кәм тигәндә, бер смена буйына эшләргә етерлек ҙур участкалар әҙерләп ҡуйылыуы шарт.

Агрегаттың эшләүе өсөн билдәләнгән баҫыу загондарға бүленә. Загондарға ентекле бүлеү агрегаттарҙың сәғәт графиге менән уңышлы эшләүҙәре өсөн мөһим сара булып тора. Загондарға бүлеү техникаһы ҡатмарлы түгел, һәм ул махсус оборудованиелар талап итмәй. Загондарға бүлгән ваҡытта 2,5—3 метр бейеклегендәге таяҡтар (вышкалар) файҙаланыла, алыҫтан уларҙы яҡшыраҡ күреү өсөн уларҙың баштарына һалам йәки ағас ботаҡтары бәйләнә. Ошондай ике таяҡ загондың ике башына, ә өсөнсөһө улар араһына ҡуйыла. Уларға ҡарап, тракторҙы бик тура итеп алып барырға мөмкин. Загондарға бүлгән ваҡытта уның буйын мөмкин тиклем оҙонораҡ алырға кәрәк, сөнки уның буйы артыу менән агрегатҡа боролоу өсөн кәрәк булған ваҡыт кәмей һәм хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелә. Шулай уҡ загондарҙы 3 километрҙан да оҙон алырға ярамай, сөнки был агрегаттың бригада станынан алыҫ китеүенә килтерә, машиналарҙы техник тәрбиәләүҙе, хеҙмәтләндереүҙе ҡыйынлаштыра һәм персоналдың квалификацияһы юғары булмаған ваҡытта кире һөҙөмтәләр биреүе мөмкин.

Агрегат работниктәрен һәм агрегатты хеҙмәтләндереүсе колхозсыларҙы әҙерләү, уларҙың сәғәт графиге менән эшләүҙәрендә ҙур әһәмиәткә эйә. Республиканың алдынғы механизаторҙары, трактор бригадалары бригадирҙәре Социалистик Хеҙмәт Геройы Рябов (Баҙан МТС-ы) һәм Ғәбәйҙуллин (Приют МТС-ы) һәм башҡалар үҙ эштәренең уңышын байтаҡ дәрәжәлә агрегатты хеҙмәтләндереүсе работниктәр коллективының даими булыуы, дуҫ һәм берҙәм эшләүҙәре, уларҙың үҙ бурыстарын яҡшы белеүҙәре менән аңлаталар.

Был бригадаларҙа эштә берҙәмлеккә һәм агрегаттың өҙлөкһөҙ эшләүенә өлгәшеү өсөн кәрәкле кешеләр һайланып алынған һәм уларҙың һәр береһенә үҙ бурыстары яҡшылап аңлатылған. Агрегаттың бөтә работниктәре менән дә техник занятиелар үткәрелә. Иптәш Ғәбәйҙуллин был эшкә айырыуса иғтибар бирә. Ул үҙ бригадаһында эшләгән кешеләрҙе эштән һуң йыйнап, буш тороу сәбәптәрен һәм уларҙы бөтөрөү юлдарын тикшерә.

Агрегаттың сәғәт графиге менән эшләүе өсөн эш башланғанға тиклем тракторист, трактор бригадаһының бригадиры һәм учетчигы менән бергә сәғәт графигын төҙөй. Был графикта агрегаттың бер көндәлек заданиеһе, иҫәп-хисап мәғлүмәттәре буда.

Загондың күләме, агрегаттың хәрәкәт итеү тиҙлеге, тағылма инвентарҙарҙың ергә эшкәртеү киңлеге, уның эш ваҡыты — графикте төҙөү өсөн төп мәғлүмәттәр булып тора. Иҫәп-хисап мәғлүмәттәренә бер сәғәт эсендә нисә гектар ер эшкәртә алыу мөмкинлеге һәм сәсеү өсөн талап ителгән орлоҡтарҙың күләме инә. Бер сменаға агрегатҡа бирелгән задание иҫәбенә агрегат үтергә тейеш булған круглар һаны, бер кругты үткәндә эшләнгән майҙан, шулай уҡ эште үтәү өсөн кәрәк булған ваҡыт инә.

Шишмә, Приют һәм Дәүләкән МТС-тарында һөрөү, культивациялау һәм сәсеү ваҡытында сәғәт графигын ҡулланыу тәжрибәһе эш иҫәбен круг буйынса алып барыуҙың графикте төҙөгән ваҡытта айырыуса маҡсатҡа ярашлы булыуын күрһәтә.

Түбәндә сәсеү, культивациялау һәм һөрөү ваҡытында сәғәт графигын төҙөүҙең өлгө планы килтерелә:

Сәсеүҙә СТЗ — НАТИ йәки ДТ — 54 тракторының өс трактор һәм бер ат сәскесе менән сәғәт графиге буйынса эшләүе.

Төп мәғлүмәттәр. Агрегат киңлеге — 12,3 метр, трактор тиҙлеге III — сәғәтенә 5,2 километр. Загондарҙың күләме — оҙонлоғо 2000 метр, киңлеге 250 метр. Сәсеү нормаһы — гектарына 1,5 центнер. Эш башлана 6 сәғәттә, тамамлана 18 сәғәттә.

Иҫәп-хисап мәғлүмәттәре. Бер сәғәттә мөмкин булған етештереүсәнлек — 6,4 гектар, агрегаттың бер сәғәтлек эшә өсөн талап ителгән орлоҡ — 9,6 центнер.

Ошо мәғлүмәттәрҙән сығып агрегатҡа бер сменаға задание төҙөлә.

1. Круглар һаны	1	2	3	4...	12
2. Күпме гектар майҙанда сәсергә	4,92	9,84	14,76	18,68...	49,2
3. Эш тамамланыу ваҡыты	6 сәғәт 50 мин.	7 сәғәт 40 мин.	8 сәғәт 30 мин.	9 сәғәт 20 мин.	16 сәғәт
4. Эштең фактик тамамланыу ваҡыты	—	—	—	—	—

Эштә тамамлауҙың фактик ваҡыты эш процесендә тракторист тарафынан ҡуйыла.

Юғарыла күрһәтелгән миҫалда агрегаттың беренсе сменалағы йәғни 10 сәғәт буйына эшләгән осоро алынған. Фактик алғанда, сәсеү агрегаты ҡараңғы төшкәнгә тиклем, йәғни 15 — 16 сәғәт эшләй, тимәк, бындай агрегат бер көн эсендә 75 — 80 гектар майҙанда ашлыҡ сәсә ала.

Тракторист, сәғәт графиге менән эшләп, үҙә тарафынан яһалған кругтарҙың һаны буйынса, йәғни загондың ике башында ла үтелгән юл һаны буйынса үҙенең смена заданиеһе үтәлешенең барышын билдәләй.

Бер кругта эшкәртелгән майҙанды билдәләү өсөн агрегаттың фактик киңлеген агрегат тарафынан үтелгән юл оҙонлоғона (загондың ике оҙонлоғона) тапҡырларға кәрәк. Беҙҙең миҫалда агрегат киңлеге 12,30 метр, ә үтелгән юл 4000 метр (загон баштарында үтелгән юл иҫәпкә алынмай, сөнки агрегат загон баштарында эшләмәйенсә үтә), тимәк, бер круг үткәндә 4,92 гектар майҙан сәселгән була.

Бер кругты үтеү өсөн талап ителгән ваҡыт түбәндәгесә иҫәпләнә: бер кругта үтелгән юл оҙонлоғо агрегаттың бер минуттағы хәрәкәт итеү тиҙлегенә бүленә. Беҙҙең миҫалда кругтың оҙонлоғо 4000 метр, ә агрегаттың хәрәкәт итеү тиҙлеге сәғәтенә 5,2 километр, был, минутына 5200 метр: 60 — 86 метр тәшкил итә. Тимәк, агрегаттың загондың ике башында урап үтеү өсөн кәрәк булған ваҡыты 400:86=46 минут тәшкил итә. Загон баштарында бороолоштарҙы иҫәпкә алып, агрегат бер кругты 50 минут эсендә үтәсәк.

Шуны билдәләргә кәрәк, миҫал өсөн төп мәғлүмәттәрҙең практик шарттарҙа үҙгәреүҙәре мөмкин. Мәҫәлән, тигеҙ участкаларҙа агрегаттың йөрөү тиҙлеге үҙгәрергә, агрегаттың эш ваҡыты оҙонайтылырға мөмкин. Шулай итеп, агрегатҡа бер сменаға графикта килтерелгән заданиеларҙы күп кенә трактористар байтаҡ арттырып үтәй алалар.

Культивациялауҙа ла сәғәт графиге сәсеүҙәге кеүек үк төҙөлә тиерлек.

Һөрөүҙә. С—80 тракторының биш корпуслы ике һабан менән эшләгәндә сәғәт графиге. **Төп мәғлүмәттәр** — агрегаттың киңлеге — 3,5 метр, тракторҙың тиҙлеге — сәғәтенә 5,1 километр. Загондың күләме: оҙонлоғо — 2500 метр, киңлеге 200 метр. Смена иртәнге 8 сәғәттә башлана һәм 18 сәғәт 20 минутта тамамлана.

Иҫәп-хисап мәғлүмәттәре. Бер сәғәттә мөмкин булған етештереүсәнлек — 1,78 гектар.

Юғарыла күрһәтелгән миҫалдағы кеүек агрегаттың бер сменаға заданиеһе төҙөлә. Был ваҡытта 10 круг яһарға, 17,5 гектар ер һөрөргә. Һәр бер кругты 62 минут эсендә әйләнеп сығыу кәрәклеге билдәләнелә.

Эш ваҡытын тығыҙлау сәғәт графиге менән эшләүҙә бик мөһим. Алдынғы механизаторҙарҙың һәр бер минутты маҡсатҡа ярашлы итеп файҙаланыуҙары һәм агрегаттың буш тороуын минимумға кәметеүгә ынтылыуҙары улар өсөн айырыуса характерлы булып тора. Агрегаттар машиналарға техник тәрбиә үткәреү өсөн тик сменалар араһында ғына туҡталырға тейештәр. Алдынғылар был эш өсөн иң бары 45—60 минут ҡына ваҡыт бүләләр.

Ораҡтағы агрегат хәрәкәт иткән ваҡытта һалыу ҙа ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Сөнки туҡтап орлоҡ һалыу өсөн эш ваҡытының 15—20 проценте китә. Шуға күрә агрегат хәрәкәт иткән ваҡытта 40—50 килограмм орлоҡ һалынған тоҡтар менән үткәрелергә тейеш.

Айырым эшселәрҙе алыштырыу юлы менән агрегаттың төшкө аш ваҡытында буш тороуында 20—30 минутҡа кәметергә мөмкин. Тракторҙарға шулай уҡ бураҙнала яғыулыҡ һәм һыу менән заправка яһау буш тороуҙарҙы байтаҡ кәметә.

Эште сәғәт графиге менән ойошторған ваҡытта тракторист һәр бер круг һайын үҙ заданиеһен нисек үтәүен, графиктан алға китеүен йәки артта ҡалыуын тикшерә, графиктан артта ҡалған ваҡытта ашығыс саралар күрә һәм артта ҡалыуҙы бөтөрә ала.

Яҙғы сәсеүҙә республиканың бөтә трактор бригадаларында ла сәғәт графиген индерергә һәм киң ҡулланырға кәрәк.

Е. Тулбаев,
БАССР Ауыл хужалығы министрствоһының көнбайыш бүлеге начальнигы.

ЯҘҒЫ БАҪЫУ ЭШЕНДӘ АТТАРҘЫ ФАЙҘАЛАНЫУ

[illegible] колхоздарыбыҙҙа баҫыу эштәре[нең] механизациялаштырылыуы юғары. [illegible] яҙғы баҫыу осорондағы бөтә төп [эштәр] башлыса, тракторҙар көсө менән [башкары]лалар. Шуның менән бергә, баҫыу эштәре осоронда йәнле тартыу көсө[нә ихтыяҗ] ҙа эш күп. Аттар һәм эш үгеҙ[ҙәре ме]нән баҫыуға тиреҫ, минераль ашламалар һәм сәсеү орлоктары сығарыла, [illegible] һыу һәм ягыулыҡ ташыла һәм [башҡа] мөһим эштәр башҡарыла. Күп кенә колхоздарҙа аттар менән ер һөрөү, [тырма]лау, сәсеү һәм башҡа эштәр үткә[рел]ә. Шуға күрә был осорҙа аттарҙы [ашат]ыуға һәм эш өҫтөндә тәрбиәләүгә [айы]руса ныҡ иғтибар итеү талап [ителә].

Учалы районының «Кыҙыл партизан», [illegible], «Октябрь» һәм башҡа күп кенә [колхоз]дары быйыл эш аттарын яҙғы баҫыу эше осорона яҡшы әҙерләнеләр. Ләкин был районың ҡайһы бер колхоздарында уларҙы яҙғы сәсеүгә әҙерләүгә иғтибар бирмәнеләр. Күпселек аттар ябыҡ, [illegible] эше натруженһын башҡарырлыҡ [түгел]. Шулай булһа ла, был колхоздарҙың етәкселәре аттарҙы тәрбиәләүҙе ойоштормайҙар. Мәҫәлән, Ленин исемендәге [колхоз]дың иптәш Моратов етәкселек иткән [illegible] бригадаһында 24 ат бар. Шуларҙан 10-һы ябыҡ, 10-һы уртасанан түбән көрлектә. Тик 4 ат ҡына урта көрлектә. Был колхоздың иптәш Насиров етәкселек иткән бригадаһында ла шундай уҡ хәл. Колхоздағы 115 аттың 65 проценте ябыҡ һәм түбән көрлектә. Уларға сбруйҙар етерлек түгел, арбалар ремонтланмаған. Бесәнлең сифаты түбән, ул әҙерләнмәй бирелә. Ошондай уҡ етешһеҙлектәр был райондағы «Коммунар», «Берлек» һәм Ворошилов исемендәге колхоздарында ла бар.

Яҙғы баҫыу эштәрендә йәнле тартыу көстәрен уңышлы файҙаланыуҙы тәьмин итеү өсөн, иң элек уларҙы һәм егеү инвентарҙарын колхозсыларға акт буйынса беркетергә, эш өҫтөндә тәрбиәләүҙе яҡшыртырға кәрәк. Уларҙы файҙаланыуҙа һәм тәрбиәләүҙә әйәһеҙлеккә юл ҡуйырға ярамай. Баҫыу стандарында аттар ваҡытында ашатылырға һәм эсерелергә, ваҡытында ял да итергә тейештәр. Уларҙы үҙ ваҡытында ашатыу һәм эсереү бик мөһим. Яҡшы ашатыу бигерәк тә түбән көрлектәге аттар өсөн ҙур роль уйнай. Был осорҙа рационға яҡшы сифатлы бесән, концентрат индерергә, йәки түбән сифатлы бесәнде башлап, ҡайнар һыуға бөгөртөп бирергә кәрәк. Түбән көрлектәге аттарҙың ашмәкәрлеген тиҙ күтәреү һәм уның көсөн һаҡлау өсөн шәкәрле һәм минераль матдәләргә бай булған тамыр аҙыктарҙы — кишер, сөгөлдөр, картоф биреү файҙалы була. Уларға бесән һәм һоло биреү менән бер рәттән, ваҡланған, парландырылған һаламға аҙыраҡ он һәм тоҙ һибеп һәм бешкән картоф ҡушып бирергә тәҡдим ителә. Шулай итеп, бешкән картофты көнөнә 10 килограмға тиклем бирергә ярай.

Ваҡытында ял иттереү һәм таҙартыу аттың көсөн тулыһынса файҙаланыуға ярҙам итә. Таҙартыу өсөн тимер йәки ағас ҡырғыстар файҙаланырға ярамай, тик щетканы ғына ҡулланырға кәрәк. Әгәр ул булмаһа, йомшаҡ ҡайын сыбығынан эшләнгән һеперке менән таҙартырға мөмкин. Көн һайын һыу эсергәндән һуң, ат яҡшылап таҙартылырға тейеш. Был уның аппетитен аса, организмдә матдәләр алмашыныуҙы яҡшырта. Тимәк, аттың көсө арта.

Күптәр был сараларға ныҡ иғтибар итәләр. Уларҙа аттар өсөн бригадаларҙа ныҡлы тәртип булдырылған. Шул тәртип буйынса аттар эштә файҙаланыла, ашатыла, эсерелә һәм ял иттерелә.

Һ. Юлдыбаев,
Ветеринар врачы.

Культура-ағартыу учреждениеләре работниктәре өсөн семинар

Ошо көндәрҙә ВКП(б)-ның Илеш райкомы культура-ағартыу учреждениеләре работниктәре өсөн ике көнлөк семинар үҙгарҙы. Унда ҡатнашыусылар «Яҙғы сәсеү осоронда культура-ағартыу учреждениеләре работниктәренең бурыстары», «Үлән сәсеү системаһы индерелгән баҫыусылыҡ», «Китап уҡыусылар конференцияһына нисек әҙерләнергә һәм уны нисек үҙғарырға», «Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре» тигән темаларға лекциялар һәм докладтар тыңланылар.

Семинарҙа Манауез уҡыу өйө һәм Баҙытамаҡ ауыл клубы мөдирҙәре үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар. Семинарҙа ҡатнашыусыларға колхоздарҙа баҫыу стандарын, трактор вагончиктәрен нисек йыһазландырырға кәрәклеге тураһында күрһәтмәләр бирелде.

М. Шәкирьянов.

КИНО

„Яника“

Беҙҙең бөйөк социалистик илебеҙ бөтә халыҡ демократияһы илдәре менән ҡаҡшамаҫ дуҫлыҡ тойғолары аша бәйләнгән. Уларҙың тормоштары, культура һәм тәҙәлеш өлкәһендәге уңыштары беҙҙең халыҡыбыҙҙа бик ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Халыҡ демократияһы илдәре тураһында совет документаль фильмдәре һәм шулай уҡ был илдәрҙең үҙҙәрендә тыуҙырылған иң яҡшы художестволы кинокартиналар Тыуған илебеҙҙең экрандарында ғәйәт ҙур уңыштар менән файҙаланалар.

Венгрияның һуғыштан һуңғы кинематографияһы менән танышлыҡ 1948 йылдан алып, унда промышленностең иң мөһим тармаҡтары менән бер рәттән, кинопроизводство ла халыҡ демократияһы хөкүмәте ҡарамағына күскән ваҡыттан алып башланды.

Венгрияның кинематографистәре, уларҙың үҙҙәренең танышыуҙары буйынса, совет киноһы мастерҙарының әҫәрҙәрендә социалистик реализм методына өйрәнәләр. Быны хәҙерге көндә ҡала кинотеатрҙарының экрандарында күрһәтелә торған «Каталина Кишттың бәхете» һәм «Яника» кинокартиналарынан асыҡ күрергә мөмкин.

«Яника» фильме — Бекеффи Стелла сюжете буйынса сценарист Иштван Бекеффи тарафынан яҙылған комедия. Бында комедиялы күренештәр серьез политик тема менән органик бәйләнгәндәр. Быны һиҙ әҫәрҙең байтаҡ өҫтөнлөгө итеп иҫәпләргә мөмкин.

Тәбиғәттә бөтөнләй йәшәмәгән 14 йәшлек малай Яника пьесаның геройы. Башлап яҙыусы драматург Фенек был ролде уйнауҙы танылған актриса Гизи Коларға тәҡдим итә.

Ләкин артистка Колар ролде уйнауҙан ҡырҡа баш тарта. Сөнки уның үткәндәге ауыр иҫтәлектәре «Яника» исеме менән бәйләнгән. 15 йыл элек уны ташлап Американа киткән ирен дә Яныш тип атап йөрөткән. Гизи Колар элекке кеүек үк Янышты ярата, һәм уның тураһында осраҡлы рәүештә булһа ла хәтерләү бик ауыр тойола уға.

Шулай ҙа, ул пьесаны уҡып сыҡҡандан һуң Яника ролен оҡшата һәм уны башҡарыу өсөн әҙерлек алып бара башлай. Ошондай әҙерлек ваҡытында уның ире Яныш Балла үҙенең тыуған иленә ҡайта. Уның менән осрашҡанда Колар малай ролен әҙерләгәнлә малайҙар кейемендә була һәм үҙен Яныш һәм Гизи улы итеп таныта.

Шик юҡ, Голливудта ундай фабула әшәке бер фарс өсөн һылтау булып торор ине. Венгрия кинематографистәре уны халыҡ демократияһы илдәре тураһында Америка реакционерҙәре тарафынан таратылған әрәмгес ялғанлыҡты фаш итеү өсөн таҡҡыр файҙаланғандар.

Яҙыусы Яныш Балла, иҫке режимда үҫкән прогрессив әҫәрҙәрен Венгрия театры сәхнәһендә ҡуйырға өлгөшә алмағанлыҡтан, Венгрияны ташлап Американа күскән. Шулай итеп ул «ижад ирклеген үлтерә торған» илдә ҡалырға теләмәгән.

Ләкин Трумэн Америкаһы ла шундай илдәрҙең береһе булып тора. Ә яңы азат Венгрияла ижад ирклеген баһалайҙар ҙа, үстерәләр ҙә.

Ләкин Янышка был билдәһеҙ. Сөнки Америка пропагандаһы Венгрия тураһында ҡот осҡос ялғандар тарата. Яныш тыуған иленә ҡайтҡас, Америка информацияһы менән Венгрия ысын барлығы араһындағы бөтөнләй ҡапма-ҡаршылыҡты күреп ғәжәпләнә.

Өгәр ҙә «Америка тауышы»на ышанғанда, Будапештта бер генә лә бөтөн йорт ҡалмаған, ярарға утын юҡ, балалар туңып үләләр. Аслыҡ, елкә уҙарыу тыйылған, сиркәүҙәр ябылған. Быларҙың бөтәһе лә әшәке ялған булып сыға. Яныш йәнле, шат Будапештте күрә. Урамдарҙа йәнле хәрәкәт, байрамға әҙерләнәләр. Магазиндарҙа — теләһә ниндәй тауарҙар бар, рестарандарҙа — күп төрлө ашамлыҡтар.

Яныш Америка информацияһының ялғандарын юҡҡа сығара торған был асыҡ факттарҙы блокнотына яҙа бара.

«Тимер шаршау юҡ.
Карточка системаһы юҡ.
Һуғышҡа әҙерләнеү юҡ.
Динде ҡыҫыу юҡ...»

Яныш Венгрияға Американың бер бай ҡыҙы Дэзиға өйләнергә тип үҙ ҡатыны менән айырылышырға ҡайта. Ләкин Гизи Колар ирен үҙенә кире ҡайтара. Яңы Венгрияла Яныш үҙенең эҙләгәнен — ирекле ижади хеҙмәткә хоҡуҡ һәм ысын мөхәббәт таба.

Дөрөҫ, фильмдә күҙгә сағылырлыҡ ҡайһы бер етешһеҙлектәр ҙә бар. Мәҫәлән, Яныштың Будапешттәге тормошон экранда бер ни тиклем тулыраҡ күргә килә. Ул сағында, Америкала голливуд драматургы һәм миллионерша ҡейҙүе Яныштың йәшен тиҙлеге менән «ҡайтанан тыуыуына» ниндәйҙер бер ғәжәпләнеү менән ҡағарға урын ҡалмаҫ ине. Шулай ҙа, тотошо менән алғанда «Яника» — оҫта ҡуйылған күңелле һәм файҙалы фильм.

Бер-береһенә бөтөнләй оҡшашы булмаған ике ролде бер үк ваҡытта башҡарыусы актриса Ида Турайның ғәйәт ҙур талантҡа эйә булғанлығы күренеп тора.

«Яника» кинокартинаһы — Венгрия кинематографияһының идея һәм художество яғынан тайпылышһыҙ үҫешен күрһәткән асыҡ миҫал булып тора.

Б. Гәрәев.

Хеҙмәт өлгәһе күрһәтә

Әлшәй районы Салауат исемендәге ауыл хужалығы артеленең ҡарт колхозсыһы иптәш Ситдиҡов өс йыл инде йылҡы ҡараусы булып эшләй. Ул үҙенә тапшырылған почетлы һәм яуаплы бурысты намыҫ менән башҡара.

Эшкә башлауҙың тәүге йылында уҡ ул тәрбиәләгән 11 бейәнән 11 толон алып үҫтергәйне. 1949 йылда 23 бейәнән 23 толон, ә 1950 йылда 25 бейәнән 25 толон алып үҫтереүгә өлгәште. Ул тәрбиәләгән ҡолондар таҙа һәм көр булып үҫәләр. Колхозда йылҡысылыҡты үҫтереү планы йыл һайын арттырылып үтәлә.

Колхоз правлениеһы иптәш Ситдиҡовтың хеҙмәтен юғары баһалай. Ул йыл һайын бүләкләнә. Үҙенә йылда ла бер ярыш һәм бер быҙау бушлай бирелде.

Йәшелсә баҡсаһында тәүге эштәр

Стәрлетамаҡ. Карл Маркс исемендәге колхоз йәшелсә баҡса культураһын сәсеүҙе арттыра. Быйыл бында бөтәһе 11 гектар майҙанда еләк-емеш һәм төрлө йәшелсә культуралары үҫтереләсәк. Шул иҫәптән бер гектар майҙанда ҡарағат ултыртыласаҡ.

Хәҙер иптәш Садыҡ Собханғолов етәкселегендә 30 кешенән торған баҡсасылар бригадаһы парниктарға кәбеҫтә һәм помидор рассадалары ултырта, баҡса майҙандарында тупраҡ әҙерләй.

Колхоз 1951 йылда баҡсасылыҡтан 80 мең һум доход алыуҙы планлаштыра.

Б. Морзағалиев.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 23 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 23 апрелдә булған ултырышында АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Беренсе һүҙҙе СССР вәкиле А. Громыко алды. Ул көнбайыштағы өс держава делегацияһы тарафынан 17 апрелдә тапшырылған көн тәртибе проектында һәм Джессеп, Пароди һәм Дэвис тарафынан әлекке ултырышта әйтелгән аңлатмаларҙа ҡоралланыуҙар һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу мәсьәләһенең айҡанлы әлекке ултырышта башланған сығышын дауам иттерҙе.

Громыко Пародиҙың, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне БМО-ла ҡарап ваҡытта, ҡоралланыуҙар һәм ҡоралы көстәрҙе дөйөм ҡыҫҡартыу һәм атом ҡоралын тыйыу принциптары тураһындағы мәсьәлә буйынса 1946 йылдың 14 декабрендә Генеральный Ассамблея тарафынан ҡабул ителгән резолюцияны үтәргә мөмкинлек бирерлек ҡарарҙарҙы ҡабул итеүгә йәнәһе Советтар Союзы ҡаршы килде, тигән белдереүенең мәғәнәһеҙлеген күрһәтте.

— Пароди, — тине СССР вәкиле, — ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне БМО-ла тикшереүҙе асыҡтан-асыҡ күҙҙә тотто. Был мәсьәлә Генеральный Ассамблеяның 1946 йылдың 14 декабрендә резолюция ҡабул итеүенән һуң тикшерелгәйне. Юғарыла әйтелгән резолюцияны Генеральный Ассамблеяның ҡабул итеүенән һуң көнбайыш державалар тарафынан индерелгән ҡайһы бер тәҡдимдәрҙе Советтар Союзының ни өсөн ҡабул итмәүен АҠШ һәм Великобритания вәкилдәре кеүек үк Пароди ҙа яҡшы белә. Билдәле, был тәҡдимдәр тик ғәҙәттәге ҡоралланыуҙарға ғына ҡағылдылар һәм атом ҡоралына һәм массовый юҡ итеүҙең башҡа средстволарына бөтөнләйгә ҡағылманылар. Дөрөҫ, көнбайыш державаларҙың делегаттары икенсе бер комиссияла атом ҡоралы тураһындағы мәсьәлә буйынса ла тәҡдим индерҙеләр. Ләкин был тәҡдимдәрҙе үҙен хөрмәтләүсе, үҙенең бойондороҡһоҙлоҙон һаҡларға теләүсе бер генә ил дә ҡабул итә алманы. Әлбиттә, был тәҡдимдәрҙе Советтар Союзы ла ҡабул итә алманы.

— Шулай итеп, — тип билдәләне Громыко — Генеральный Ассамблеяның 1946 йыл 14 декабрҙәге резолюцияһының ҡабул ителмәүе өсөн яуаплылыҡ тулыһынса көнбайыш державалар хөкүмәттәренә һәм, бөтәһенән элек, АҠШ хөкүмәтенә төшә. АҠШ хөкүмәте тыныслыҡты яҡлау бурысы менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булмаған үҙенең айырым маҡсаттарын күҙҙә тотоп, был эштә икенсе төрлө эш итте. Ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу һәм яңы һуғышҡа әҙерләнеү өлкәһендә көнбайыш державалар хөкүмәттәренең артабанғы саралары Генеральный Ассамблея тарафынан ҡабул ителгән резолюцияны боҙоу был державаларға ни өсөн кәрәк булыуын асыҡ күрһәтте.

БМО-ла ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне тикшереү теләгән һеҙемтәләргә килтергәс, — тип дауам итте Громыко, — беҙ бер нисә таҡҡыр күрһәткәнсә, был мөһим бурысты хәл итеүгә ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу политикаһын булһын, шулай уҡ Көнбайыш Германияла герман милитаризмын ҡайтанан тыуҙырыу политикаһын СССР хөкүмәте ғәйепләне, ғәйепләй һәм ғәйепләйәсәк, тип СССР делегацияһы бер нисә таҡҡыр күрһәткәйне инде, — тип белдерҙе Громыко. Совет делегацияһы, сит ил эштәре министрҙәре дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарарға тейештәр, тип көн тәртибенә яҙырға тәҡдим итә.

Болгария, Венгрия һәм Румыния менән тыныслыҡ договорҙары тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индерергә ос делегацияның тәҡдименә ҡағылып, Громыко былай тип белдерҙе:

— СССР делегацияһы, Румыния, Болгария һәм Венгрия менән тыныслыҡ договорҙарын ғына түгел, шулай уҡ Италия менән тыныслыҡ договорын да һәм дүрт державаның Германия менән Австрияға ҡағылған килешеүҙәрен дә министрҙәрҙең тикшереүе күҙҙә тотоласаҡ, тип күҙҙә тотоп тыныслыҡ договорҙары тураһындағы пунктты көн тәртибенә индереү тураһындағы тәҡдим менән риҙалашырға әҙер. Күреүегеҙсә, СССР делегацияһының позицияһы бөтөнләйгә асыҡ.

— Италия менән тыныслыҡ договорының Триестҡа ҡағылған өлөшөн үтәү тураһындағы мәсьәлә буйынса ла совет делегацияһының позицияһы шулай уҡ бик асыҡ булып тора, — тип дауам итте, Громыко.

Әлекке ултырышта Джессеп тарафынан, «совет делегацияһының айырым тәҡдимдәре менән тотош алғанда көн тәртибе араһында ниндәй бәйләнеш бар?», тип бирелгән һорауға яуап биреп, Громыко был һорауҙың юрамал томанлы булыуын билдәләне.

Йомғаҡлау һүҙендә, Громыко, өс держава вәкилдәре, үҙҙәренең бөтә декларацияларына ҡарамаҫтан һәм совет делегацияһының был йүнәлештә мөмкин булған бөтә нәмәне эшләүенә ҡарамаҫтан, көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү мөмкинлеген еңеләйтеү өсөн әле булһа ниндәй ҙә булһа реаль практик аҙымдар яһаманылар, тип күрһәтте.

Унан һуң сығыш яһаған Пароди, Дэвис һәм Джессеп СССР вәкиле Громыко сығышында килтерелгән ышандырырлыҡ дәлилдәргә ҡаршы бер генә нигеҙле һүҙҙәр ҙә әйтә алманылар.

Ҡытайҙың Яңы-Демократик Йәштәр Союзының Төньяҡ Ҡытай Комитетен ойоштороу

ПЕКИН, 23 апрель. (ТАСС). Пекинда Төньяҡ Ҡытайҙың биш провинцияһындағы һәм ике ҡала районындағы Яңы Демократик Йәштәр Союзы комитеттәре секретарҙәренең берләшкән конференцияһы булды.

Был конференцияла Ҡытайҙың Яңы Демократик Йәштәр Союзының Төньяҡ Ҡытай Комитете ойошторолдо.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 23 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһенең 23 апрелдә тапшырылған белдереүендә, Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәренең частәре менән берлектә, 38-се параллелдән төньяҡтараҡ бөтә фронт буйынса һуғыш алып баралар һәм Америка интервенттәренә ... һәм техникала ҙур юғалтыулар ... дауам иттерәләр, тип әйтелә;

22 апрелдә Халыҡ армияһының ... дошмандың 8 самолетын атып төшөрҙөләр.

Халыҡ-ара кинофестивалдә

ПАРИЖ, 23 апрель. (ТАСС). Канн ҡалаһында тамамланған халыҡ-ара кинофестивалдә фестивалдең жюриҙе тарафынан билдәләнелгән фильмдәргә премиялар бирелгән. Совет кинофильмдәренең күренекле достоинылыҡтарын кесерәйтергә тырышыусы реакцион круггарҙың бөтә маташыуҙарына ҡарамаҫтан, фестивалдең жюриҙе 6 совет фильменең 5-һенә: «Мусоргский», «Сәскә атыусы Украина», «Совет Латвияһы», «Совет Эстонияһы» һәм «Совет Азербайжаны» фильмдәренә премиялар бирергә мәжбүр булған.

Фестивалдә ҡатнашыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған совет фильмдәрен сигләтеп үтә алмағас, жюри «Мусоргский» фильменә... иң яҡшы декорациялар өсөн премия бирген һәм совет документаль фильмдәрен билдәләү өсөн «махсус премия» уйлап тапҡан. Польша фильме «Көнсығыш — Көнбайыш юлы» на ла шулай уҡ «махсус премия» бирелгән. Был фильм илдә аяҡҡа баҫтырыуҙа һәм реконструкциялауҙа Польша халҡының уңыштары тураһында һөйләй.

Жюри шулай уҡ Италияның фестивалдә ҙур уңыш ҡаҙанған прогрессив фильме «Милайдағы мөғжизә» не лә билдәләргә һәм уға «ҙур премия» тыһын бирергә мәжбүр булған. Был төп призды икенсе яртыһы ... ге заман буржуаз обществоһы ... ғәзәттәрен маҡтаусы Швеция ... мудзель Юлия» фильменә бирелгән.

Шулай уҡ Голландияның ... тражлы «Голландия көҙгеһе» ... Италияның «Этна» фәнни фильме ... ҡаның «Онотолғандар» фильме ... миялар менән билдәләнелгән. ... лар 2 премия һәм инглизҙәр 1 ... алғандар.

Ләкин фестиваль йомғаҡтары ... СССР, халыҡ демократияһы илдәре ... иекусствоһының һәм капиталистик илдәрҙәге прогрессив кино ... фильмдәренең ғәйәт ҙур уңышы билдәләнелә. Фестивалдә күрһәтелгән ... совет, Польшаның 2, Чехословакияның 2 һәм Венгрияның 1 фильме ... тик киноискусствоның ысын ... булды, шул уҡ ваҡытта Голливуд ... Көнбайыш Европа илдәре ... рының продукцияһы буржуаз ... ның бысраҡлылығын һәм ... гән асыҡ күрһәтте.

Тибет делегацияһының Пекинга килеүе

ПЕКИН, 23 апрель. (ТАСС). Синьхуа агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Ҡытай халыҡ-республикаһының Үҙәк халыҡ хөкүмәте менән һөйләшеү өсөн Тибеттең урындағы властәре тарафынан ебәрелгән делегаттар группаһы 22 апрелдә кис Пекинга килгән. Нгабо етәкселегендәге делегаттарҙы Ҡытай государство административ советенең премьере Чжоу Энь-лай, премьер урынбаҫары Го Мо-жо, Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең министрҙәре, милләттәр эштәре буйынса комиссия члендәре, шулай уҡ общественность вәкилдәре ҡаршылаған.

22 апрелдә кис государство административ советә премьеренең урынбаҫары Го Мо-жо делегаттар хөрмәтенә ... итеү ойоштороан. Ҡытай Үҙәк хөкүмәте менән һөйләшеү өсөн Тибет делегацияһы Пекинга ике маршрут ... са килгән. Нгабо тарафынан ... ителгән делегацияның бер өлөшө ... ре елдә Чунцинга килгән, ә унан ... аша Пекинга килгән. Делегацияның ... кешенән торған икенсе бер өлөшө ... Филиппины һәм Гонконг аша ... килгән һәм унан яҡын көндәрҙә ... гә киләсәк.

Берлинде алыу өсөн һуғыштарҙа һәләк булған совет воиндәренең һәйкәленә президент Беруттың венок һалыуы

БЕРЛИН, 23 апрель. (ТАСС). АДН агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Польша республикаһының президенте Болеслав Берут совет воиндәренең Трептовтағы (Берлин) һәйкәленә 22 апрелдә венок һалған. Президент Берут менән бергә Германия демократик республикаһының премьер-министры Отто Гротеволь, Польша хөкүмәт делегацияһының члендәре, Германия демократик республикаһы хөкүмәтенең члендәре, халыҡ палатаһы председателе Иоганнес Дикман һәм демократик партияларҙың һәм общественный делегацияларҙың вәкилдәре булған. Венок һалған ваҡытта шулай уҡ Германия демократик республикаһындағы совет дипломатик миссияһының ... Г. М. Пушкин һәм башҡа ... дипломатик вәкилдәре лә ҡатнашты.

Һәйкәл алдында Берлиндың ... хеҙмәтсәндәре йыйналған, улар ... дент Берутты һәм Польша хөкүмәт делегацияһының члендәрен ... нән ҡаршылағандар.

Америка хәрби миссияһының Тайванға килеүенә ҡарата

НЬЮ-ЙОРК, 22 апрель. (ТАСС). «Нью-Йорк таймс» газетаһының Тайбэйҙағы (Тайвань утрауындағы) хәбәрсеһе Джеймстең телеграммаһынан күренгәненсә, генерал-майор Чейз етәкселегендә Американың 100 кешенән торған миссияһын Тайванға ебәреү тураһындағы хәбәр гоминдановсы круггарҙа Ҡытай халыҡ-республикаһына ҡаршы Чан Кай-ши ғәскәрҙәре ярҙамында АҠШ-тың яңы хәрби ... әҙерләнеүен күрһәтеүсе итеп баһалана. Хәбәрсе һүҙҙәренә ҡарағанда, ... ҙәтселәр, Ҡушма Штаттар гоминдановсыларға «һөжүм итеүҙең эшлекле планын» булдырырға ярҙам итергә уйлайҙар, тип ышаналар.

Редактор F. F. ҒАФАРОВ.

„Главкинопрокаттың“ Башкортостан конторағы республика экрандарына

„ТЫНЫС КӨНДӘРҘӘ“

тигән яңы художестволы фильм сығара.

И. Прут сценарийһы. Владимир Браун постановкаһы.

Һыу аҫтында һәм комбинировать итеп төшөреүсеһе М. Черный. Композиторы — Ю. Мейтус.

Ролдәрҙә: артистәр Н. Тимофеев, А. Гречаный (Сталин премияһы лауреаты), С. Гурзо, А. Кмит, Э. Быстрицкая, Л. Драновская, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы В. Васильева, РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле Л. Фенин.

Киев художестволы фильмдәр киностудияһы производствоһы 1950 йыл.

ГЛАВКИНОПРОКАТ СЫҒАРЫЛЫШЫ 1951 ЙЫЛ.

Баҡсала

Емеш баҡсаһы оҫталыҡты, түҙемлелекте һәм бик иҫкәлекте талап итә. Алманы ни тиклем баллы һәм тәмле булһын тиһәң, уны шул тиклем иркәләргә, тәрбиәләргә кәрәк.

«Ленин юлы» колхозының баҡсасыһы Миңнекәев Әҙәлбай бынан ун дүрт йыл элек баҡсаға тәү аҙым атлап ингәндә был эштең был тиклем серьезлылығын бәлки аңлап та етмәгәндер. Бәлки ул Ишкилдин баҡсаһында ҡыҙарып бешкән алмаларҙы күргәс, ҡапыл дәртләнеп, йәшәреп киткәндер һәм ул ваҡытты баҡсасыға: алма үҫтереүҙән дә күңеллерәк эш юҡ, тип еңел генә әйтеп тә һалғандыр. Миңнекәев хәҙер был турала һөйләмәй, уның зарлантаһын да ишетеп булмай. Ҡыйынлыҡтар тураһында һорашһаң да, ул һүҙҙе икенсегә борорға тырыша. Әлбиттә, ун һигеҙ гектарлы баҡса бик тиҙ генә ошо хәлгә килмәгән. Һәр бер ағаста, уның сәскәһендә һәм татлы емешендә кешеләрҙең ҙур һәм оҙаҡҡа һуҙылған хеҙмәте һалынған.

Бына 1940 йыл. Был йылды иң яҡшы сорт алма ағастары ҡышҡы һыуыҡта туңдылар. Бына һуғыш йылдары. Тәжрибәле баҡсасы һәм уның ярҙамсыһы Миңнекәев фронтҡа китә. Күп кенә ағастар ҡороп, баҡса ташландыҡ урманды хәтерләтә.

Һуғыштан һуңғы 4-5 йыл эсендә баҡса элекке хәленә ҡайтарылды һәм колхозға унарлаған мең һум доход бирә башланы. Һәр бер колхозсының өҫтәлендә ҡарағат, ҡурай еләге вареньеһе. Хеҙмәт көненә өсәр-дүртәр килограмм кәбеҫтә, кишер, помидор өләшелде. Миңнекәевтең оҫта ҡулдары хаҡында элекке «Динамо» колхозында ғына түгел, бөтә тирә-яҡҡа билдәле булды.

Ҡыш көнө, баҡсасы өсөн эш артыҡ күп булмаған ваҡытта, Миңнекәев бригада члендәре менән баҡсасылыҡ буйынса уҡыуҙар үткәрҙе. Грузия алмалары, Украина сейәләре тураһында һөйләне, уларҙы И. В. Мичуриндең бөйөк хеҙмәте менән таныштырҙы.

Миңнекәев менән бергә бөтә бригада яҙҙы ашҡынып көттө. Ә яҙ артыҡ көттөрергә теләмәй, ҡапыл килде. Миңнекәев ярҙамсыһы Миңдәүләт менән баҡсаға килде. Яҙҙың иртә килеүе бер юлы бер нисә эште башларға мәжбүр итте. Ҡамышҡа төрөлгән бер нисә йөҙ төп алма ағастың ҡамышын алырға, ағас төптәрен тиреҫтән әрсергә, йомшартырға, питомник өсөн ерҙәр әҙерләргә, ҡороған, ҡуйы үҫкән һәм бер-береһенә тиеп торған ботаҡтарҙы киҫергә, ә яҙ һатыласаҡ ун мең төп ҡарағат, 600 төп алма ағасын әҙерләргә... улар һанап та бөтөрерлек түгел ине. Арала иң күңелһеҙ һәм мәшәҡәтле эш — ағастарҙы «ҡәкүк төкөрөгөнән» таҙартыу. Был алмаларҙың иң яуыз дошманы. Ул һәр төптә илле-алтмышлап була, әгәр баҡсала дүрт гектар алма булһа, күпме «ҡәкүк төкөрөгө» ҡуптарырға кәрәк. Оҙаҡламай питомник ултыртыу һәм, иң нескә эш, прививка башланасаҡ. Элек алманың нисек үҫкәнен дә күрмәгән Асылбаева Сания, Шоматбаев Минкәстәр быйыл был эште үҙ алдарына башҡарасаҡтар. Улар бер төп алманы ла ҡоротмаҫ өсөн үҙ-ара ярышалар.

Баҡсала ун ете сорт алма, бер нисә төр ҡарағат, сейә, ҡурай еләге, виктория һәм башҡа күп кенә емеш-еләк үҫә. Бынан тыш, ағастар араһында кәбеҫтә, ҡыяр, помидор, кишер, сөгөлдөр сәселә. Хәҙер кәбеҫтә, помидорҙар өсөн рассада әҙерләнә. Яңыртылған тиреҫ парник төптәренә һалына. Ҡыҫҡаһы, баҡсала ҡыҙыу эш бара. Көндәр майға яҡынайған һайын, ағастар бөрөләнә башлаған һайын был эш ҡыҙғандан-ҡыҙа бара. Инде алыҫ колхоздарҙан, күрше райондарҙан заявкалар килә башланы. Эреләтелгән колхоздар яңы, ҙур баҡсалар ултыртасаҡтар. Шуға күрә быйыл ултыртыу материалдары күп кәрәк буласаҡ. Бер нисә гектар алма, ҡарағат питомниктәре ултыртыласаҡ.

Райондағы был иң ҙур һәм өлгөлө баҡсаһын ҙур ғына бер кәмселеге лә бар. Баҡса Супай ауылының төньяҡ осонда һәҙәк тау төньяҡҡа ясыуланып төшкән ерҙә урынлашҡан. Яҙ көнө ағастар сәскә атҡас йәкп емешләнә башлағас. баҡса ағастарын ҡырауҙан ни тиклем генә һаҡлаһаң да, унан ҡотолоп булмай. Был бәләнән ҡотолоу өсөн бер генә юл бар. Баҡсаны ауылдың көнсығыш яғына, тау итәгенә күсереү. Был һынап ҡаралған урын. Бында бер ҡасан да ҡырау төшмәй. Иптәш Миңнекәев һәм башҡа колхозсылар ҙа был план күптән инде өлгөргән. Хәҙер колхоздар эреләтелгәс яңы баҡса булдырыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Бында беҙҙең шарттар өсөн иң яҡшы сыныҡҡан алмалар үҫәләр. Күп йылдар буйы һалынған ҙур көстө йыш ҡына була торған яҙғы ҡырауҙан әрәм иттерергә ярамай.

Тағы бер теләк. Был инде Ауыл хужалығы министерствоһына ҡайтып ҡала. Юғарыла әйткәнсә, емеш ағастары үҫмәгән урындарға колхоз бик күп төрлө йәшелсә ултырта. Былтыр дүрт гектар майҙанда кәбеҫтә үҫтерелде. Эшсе һәм йәшелсә тартыу көстәренең етешмәүе арҡаһында, колхоз был мул урожайҙы ваҡытында йыйһай һәм колхоз баҙарында тейешенсә һата алманы.

Помидор, ҡыяр, ҡарағат, ҡурай еләге менән дә шундай уҡ хәл булды. Ҡыҫҡаһы, йөҙләгән мең һум урынына ни бары 40 мең һумлыҡ доход алынды. Шуның өсөн бындай ҙур емеш-еләк баҡсалы колхоздарҙы иң беренсе наубәттә автомашина менән тәьмин итеүҙе күҙ алдында тоторға кәрәк. Әгәр ҙә юғарыла әйткән ике сара тормошҡа ашһа, колхоз 18 гектарлы майҙандан ярты миллион һумға яҡын доход аласаҡ.

И. Абдуллин.
Шаран районы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02451 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы, Тираж 25,000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.
1951 йыл
№ 82 (8799)
27 апрель
йома

Хаҡы 20 тин

Советтәр Союзының эшселәре, крәҫтиәндәре, интеллигенцияһы! 1951 йылғы халыҡ хужалығы планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ! Тыныс хеҙмәттә яңы подвигтәр менән беҙҙең социалистик Ватаныбыҙҙың ҡеүәтен нығытығыҙ!

(ВКП(б) Үҙәк Комитете саҡырыуҙарынан).

1951 йылдың 1 Майына ҡарата ВКП(б) Үҙәк Комитетенең саҡырыуҙары

1. Йәшәһен 1 Май — хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара солидарлыҡ көнө, бөтә илдәрҙәге эшселәрҙең туғандашлыҡ көнө!

2. Тыныслыҡ өсөн, демократия өсөн, социализм өсөн көрәшеүсе бөтә халыҡтарға туғандарса сәләм!

3. Үҙ илдәренең экономикаһын һәм культураһын күтәреү юлы менән, социализм төҙөү юлы менән ышаныслы барыусы халыҡ демократияһы илдәре хеҙмәтсәндәренә туғандарса сәләм!

4. Йәшәһен үҙ иленә азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ яулап алған һәм яңы тормошто уңышлы ижад итеүсе бөйөк Ҡытай халҡы!

Совет халҡы менән Ҡытай халҡтарының ҡаҡшамаҫ дуҫлығы һәм хеҙмәттәшлеге йәшәһен һәм нығыһын!

5. Сит ил баҫҡынсыларының ҡоралы интервенцияһына ҡаршы, үҙ Тыуған иленең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн геройҙарса көрәшеүсе азатлыҡ һөйөүсе Корея халҡына туғандарса сәләм!

6. Герман халҡының тормош интерестәре өсөн, берҙәм, бойондороҡһоҙ, демократик, тыныслыҡ һөйөүсе Германия өсөн көрәшеүсе Германияның демократик көстәренә сәләм!

7. Югославиялағы фашистик режимгә ҡаршы, үҙ Тыуған иленең империалистәрҙән *бойондороҡһоҙ булыуы өсөн азатлыҡ көрәшен алып* барыусы Югославияның данлы патриоттарына сәләм!

8. Үҙҙәренең азатлығы һәм милли бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшеүсе колониаль һәм бойондороҡло илдәрҙең халҡтарына туғандарса сәләм!

9. Йәшәһен бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәштә Англия, Американ Ҡушма Штаттары һәм Советтәр Союзы халҡтарының дуҫлығы!

10. Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре! Әгәр ҙә халҡтар тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу эшен үҙ ҡулдарына алһалар һәм уны аҙағына тиклем яҡлаһалар тыныслыҡ һаҡлап алып ҡалыныр һәм нығытылыр! Тыныслыҡты яҡлаусыларҙың ҡеүәтле фронтын киңәйтегеҙ һәм нығытығыҙ!

11. Бөтә донъяла тыныслыҡты яҡлаусылар! Америка, Англия, Франция һәм башҡа миллионерҙарҙың һәм миллиардерҙарҙың енәйәтсел хәрби агрессия пландарын фаш итегеҙ һәм өҙәгеҙ! Һуғыш тоҡандырыусыларға халыҡ массаларын ялғанлыҡ менән солғап алырға, уларҙы алдарға һәм яңы бөтә донъя һуғышына ылыҡтырырға юл ҡуймағыҙ!

12. Йәшәһен Советтәр Союзының тышҡы политикаһы—тыныслыҡ һәм именселек, халҡтарҙың тиң хоҡуҡлылығы һәм дуҫлығы политикаһы!

13. Тыуған илебеҙҙең тыныслығын һәм именселеген һаҡлаусы Совет Армияһына һәм Хәрби-Диңгеҙ флотына дан!

14. Йәшәһен совет пограничниктәре — Тыуған илебеҙҙең изге сиктәрен һиҙгер һаҡлаусылар!

15. Советтәр Союзының эшселәре, крәҫтиәндәре, интеллигенцияһы! 1951 йылғы халыҡ хужалығы планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ! Тыныс хеҙмәттә яңы подвигтәр менән беҙҙең социалистик Ватаныбыҙҙың ҡеүәтен нығытығыҙ!

16. Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре! Волгала һәм Днепрҙа, Донда һәм Аму-Дарьяла бөйөк төҙөлөштәрҙе уңышлы тормошҡа ашырып, коммунизм төҙөү эшенә яңы вклад индерәйек!

17. Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре! Фән өлгәшеүҙәрен һәм алдынғы тәжрибәне производствоға ҡыйыуыраҡ индерегеҙ! Техникаға тулыһынса эйә булығыҙ! Промышленноста, транспортта, төҙөлөштә, ауыл хужалығында машиналарҙы һәм оборудованиеларҙы тулыһынса файҙаланыуға өлгәшегеҙ!

18. Эшселәр һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙар, инженерҙәр һәм техниктәр! Хеҙмәт етештереүсәнлеген арымай-талмай күтәрегеҙ! Сырьеға, материалдарға, яғыулыҡҡа, электр энергияһына ныҡлы экономия яһау өсөн көрәшегеҙ! Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын арзанайтығыҙ, сифатын яҡшыртығыҙ!

19. Күмер промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Яңы техниканы күберәк файҙаланыу һәм күмер сығарыуҙың бөтә процестәрен дә тулыһынса механизациялау өсөн көрәшегеҙ! Лаваларҙа эште цикл графиге буйынса ойоштороғоҙ! Яңы шахталарҙы тиҙерәк төҙөгөҙ! Илебеҙҙең халыҡ хужалығы өсөн күмерҙе күберәк бирәйек!

20. Нефть промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Скважиналарҙы бораулау тиҙлеген күтәрегеҙ, нефттең яңы ятҡылыҡтарын тиҙерәк үҙләштерегеҙ! Нефть эшкәртеүсе яңы заводтар төҙөү темптарын юғары күтәрегеҙ! Социалистик хужалыҡ өсөн юғары сифатлы нефть продукттарын күберәк бирәйек!

21. Ҡара һәм төҫлө металлургия эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Металл етештереүҙе яңынан арттырыу өсөн көрәшегеҙ! Агрегаттарҙың һәм механизмдарҙың ҡеүәтен тулыһынса файҙаланығыҙ! Илебеҙгә суйын, ҡорос, прокат, төҫлө металдарҙы күберәк бирәйек!

22. Электр станциялары эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Яңы энергетик ҡеүәттәрҙе сафҡа тиҙерәк индерегеҙ! Яңы техниканы киңерәк индерегеҙ! Халыҡ хужалығын электр энергияһы менән өҙлөкһөҙ тәьмин итәйек!

23. Машиналар төҙөү предприятиеларенең эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Илебеҙҙең халыҡ хужалығын алдынғы техника менән байыҡтырығыҙ! Металға экономия яһау өсөн көрәшегеҙ! Промышленность, төҙөлөштәр, транспорт, ауыл хужалығы өсөн машиналарҙы күберәк бирәйек!

24. Автомобиль һәм трактор промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Производство культураһын күтәрегеҙ, автомобилдәрҙең һәм тракторҙарҙың сифатын яҡшыртығыҙ!

25. Химия промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Яңы техниканы һәм алдынғы технологияны индереү өсөн көрәшегеҙ! Минераль ашламалар етештереүҙе арттырығыҙ! Химия продукттарының ассортиментен киңәйтегеҙ һәм сифатын яҡшыртығыҙ!

26. Судноләр төҙөү промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Судноләр төҙөү техникаһын камиллаштерегеҙ! Яңы караптарҙы йылдамыраҡ төҙөгөҙ! Совет державаһының ҡеүәтле флотын булдырайыҡ!

27. Төҙөүсе эшселәр һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙар, инженерҙәр һәм техниктәр! Тиҙләтелгән төҙөү техникаһына эйә булығыҙ! Яңы предприятиеларҙе, торлаҡтарҙы, культура-көн-күреш учреждениеларен тиҙерәк төҙөгөҙ! Төҙөлөштең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтығыҙ һәм сифатын яҡшыртығыҙ!

28. Төҙөлөш материалдары промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Производство ҡеүәттәрен тулыһынса файҙаланығыҙ! Төҙөлөш материалдарының яңы төрҙәрен етештереүҙе үҙләштерегеҙ! Тыуған илебеҙҙең төҙөлөштәре өсөн цемент, кирбес, быяла, түбә ябыу, биҙәү материалдарын һәм башҡа материалдарҙы күберәк бирәйек!

29. Урман, ағас эшкәртеү һәм ҡағыҙ промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Механизмдарҙе файҙаланыуҙы яҡшыртығыҙ, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын арзанайтығыҙ! Ағас әҙерләүҙә һәм ҡыуғында хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрегеҙ! Илебеҙгә ағас материалдарын, мебелдәрҙе, ҡағыҙҙы күберәк бирәйек!

30. Еңел промышленность эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Хеҙмәттең алдынғы методтарын киңерәк индерегеҙ! Сырьеға экономия яһау өсөн, массовый ҡулланыу тауарҙарының юғары сифаты һәм киң ассортименте өсөн көрәшегеҙ! Халыҡ өсөн туҡымалар, аяҡ кейемдәре, өҫ кейемдәре, трикотаж һәм башҡа тауарҙарҙы күберәк бирәйек!

31. Аҙыҡ һәм ит-һөт промышленносе работниктәре! Туҡланыу продукттарын етештереүҙе арттырығыҙ, уларҙың сифатын яҡшыртығыҙ! Сырьеға һәм материалдарға экономия яһауға өлгәшегеҙ! Халыҡ өсөн шәкәр, май, ит, һөт продукттарын һәм башҡаларҙы күберәк бирәйек!

32. Балыҡ промышленносе работниктәре! Балыҡ тотоуҙы арттырығыҙ, етештерелә торған продукцияның сифатын күтәрегеҙ һәм ассортиментен киңәйтегеҙ! Балыҡ тотоу флотын һәм ҡоралдарын яҡшыраҡ файҙаланыу өсөн көрәшегеҙ! Илебеҙгә юғары сифатлы балыҡ продукттарын күберәк бирәйек!

33. Урындағы промышленность һәм промысловой кооперация работниктәре! Урындағы сырьенан киң ҡулланыу тауарҙарын күберәк етештерегеҙ! Изделиеларҙең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтығыҙ, уларҙың сифатын күтәрегеҙ! Хеҙмәтсәндәрҙең көн-күреш ихтыяждарын яҡшыраҡ хеҙмәтләндерегеҙ!

34. Совет геологтары — ер аҫты байлыҡтарын эҙләүселәр! Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡтарын йылдамыраҡ асығыҙ!

35. Тимер юл транспорты работниктәре! Йөк тейәүҙе арттырығыҙ, вагондар әйләнешен тиҙләтегеҙ, йөк ташыуҙың үҙенә төшөү хаҡын арзанайтығыҙ, ремонтты яҡшыртығыҙ! Поездар хәрәкәте графиген аныҡ үтәү өсөн көрәшегеҙ! Тимер юл төҙөләшөнөң темпын һәм сифатын күтәрегеҙ! Пассажирҙарҙе хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртығыҙ!

36. Диңгеҙ һәм йылға флоты работниктәре! Порттар һәм пристандарҙың аныҡ эшләүен ойоштороғоҙ! Судноләр әйләнешен тиҙләтегеҙ, йөк ташыуҙың үҙенә төшөү хаҡын арзанайтығыҙ! 1951 йылғы планды срогынан алда үтәү өсөн көрәшегеҙ!

37. Ауыл хужалығы эшсәндәре! 1951 йылда бөртөклө һәм техник культуралар урожайлылығын һәм валовой йыйымын байтаҡ күтәреүгә, общественный малдар һанының һәм продукт биреүсәнлегенең артыуына өлгәшәйек! Халыҡ өсөн аҙыҡ-түлек һәм промышленность өсөн сырье муллығын булдырайыҡ!

38. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, ауыл хужалығы специалистәре! Яҙғы сәсеүҙе һәм башҡа ауыл хужалығы эштәрен өлгөлө үткәрәйек! Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың бөтә сәсеүлек майҙанында юғары урожай үҫтерәйек!

39. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, ауыл хужалығы специалистәре! Ауыл хужалығы фәне ҡаҙаныштарын һәм колхоздарҙың, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың алдынғы тәжрибәһен производствоға киңерәк индерегеҙ! Социалистик игенселек һәм малсылыҡ алдынғыларының сафтарын арттырығыҙ!

40. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар! Эре коллектив хужалыҡ өҫтөнлөктәрен тулыһынса файҙаланығыҙ! Колхоздарҙың общественный байлығын арттырығыҙ, хеҙмәт дисциплинаһын нығытығыҙ, Ауыл хужалығы артеле Уставын — колхоз тормошоноң төп законын изге һаҡлағыҙ!

41. Ауыл хужалығы эшселәре, трактористәр, комбайнерҙәр, МТС һәм совхоз механиктәре! Техниканы тулы файҙаланыу өсөн көрәшегеҙ! Тракторҙарҙа һәм комбайндарҙа эшләп сығарыуҙы арттырығыҙ! Баҫыу эштәре сифатын күтәрегеҙ, юғары урожайҙар алыуға өлгәшегеҙ!

42. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, совхоз эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, зоотехниктәр һәм ветеринар работниктәр! Общественный малсылыҡты бөтә яҡлап үҫтерегеҙ, малдар һанын арттырығыҙ, уның продукт биреүсәнлеген күтәрегеҙ! Малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырайыҡ!

43. Ауыл һәм урман хужалығы работниктәре! Урман полосаларын ултыртыу эштәрен бөтә яҡлап үҫтерегеҙ! Дөрөҫ сәсеү әйләнештәрен тиҙерәк үҙләштерегеҙ, һуғарыуҙың яңы системаһын индерегеҙ, быуалар һәм һыу ятҡылыҡтары төҙөгөҙ! Юғары һәм тотороҡло урожайҙар тәьмин итәйек!

44. Мамыҡ сәсеүсе колхоздарҙың колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары! Мамыҡтың юғары урожайы өсөн көрәшегеҙ! Промышленность өсөн күберәк мамыҡ бирегеҙ!

45. Совет сауҙаһы, кооперация, общественный туҡланыу работниктәре! Ҡалала һәм ауылда культуралы совет сауҙаһын бөтә яҡлап йәйелдерегеҙ! Совет потребителен хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртығыҙ!

46. Государство учреждениеларенең хеҙмәткәрҙәре! Совет аппараты эшен яҡшыртығыҙ, государство дисциплинаһын нығытығыҙ, хеҙмәтсәндәрҙең талаптарына иғтибарлы мөнәсәбәт итегеҙ!

47. Ғилми учреждениелар һәм юғары мәктәп работниктәре! Алдынғы совет фәненең артабан сәскә атыуы өсөн көрәшегеҙ! Ғилми эштә ижади тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе ҡыйыуыраҡ йәйелдерегеҙ! Фән һәм техниканы яңы тикшеренеүҙәр, асыштар һәм уйлап табыуҙар менән байытығыҙ! Халыҡ хужалығы өсөн специалистәр әҙерләү сифатын күтәрегеҙ!

48. Әҙәбиәт, искусство, кинематография работниктәре! Үҙ оҫталығығыҙҙың камиллығын күтәрегеҙ, юғары идеялы, бөйөк совет халҡына лайыҡлы булған яңы художестволы әҫәрҙәр булдырығыҙ!

49. Уҡытыусылар, халыҡ мәғарифе работниктәре! Уҡыусыларҙы фән нигеҙҙәренең белемдәре менән ҡоралландырығыҙ! Беҙҙең йәштәребеҙҙе совет патриотизмы рухында тәрбиәләгеҙ, коммунизмдың актив төҙөүселәрен әҙерләгеҙ!

50. Медицина работниктәре! Халыҡты медицина яғынан хеҙмәтләндереү сифатын артабан күтәреү өсөн көрәшегеҙ! Алдынғы фән нигеҙендә үҙ белемдәрегеҙҙе камиллаштерегеҙ! Һаулыҡ һаҡлау практикаһына совет медицина фәне өлгәшеүҙәрен индерегеҙ!

51. Совет профсоюздары! 1951 йылғы халыҡ хужалығы планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киңерәк йәйелдерегеҙ! Эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр тормошоноң материаль һәм культура камиллеген артабан күтәреү тураһында арымай-талмай хәстәрлек күрегеҙ! Йәшәһен совет профсоюздары — коммунизм мәктәбе!

52. Совет ҡатын-ҡыҙҙары беҙҙең социалистик Тыуған илебеҙ экономикаһының һәм культураһының яңы сәскә атыуы өсөн көрәшегеҙ! Йәшәһен совет ҡатын-ҡыҙҙары — коммунизмде актив төҙөүселәр!

53. Йәшәһен Ленин — Сталин комсомолы — коммунизм төҙөүсе йәштәрҙең алдынғы отряды, большевиктәр партияһының ышаныслы ярҙамсыһы һәм резервы!

54. Егеттәр һәм ҡыҙҙар! Фәнгә, техникаға, культураға эйә булығыҙ! Ныҡлы һәм ҡыйыу булығыҙ, теләһә ниндәй ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға әҙер булығыҙ! Совет халҡының коммунизм төҙөүҙәге уңыштарын үҙ хеҙмәтегеҙ менән арттырығыҙ!

55. Пионерҙәр һәм уҡыусылар! Фәнни белемдәргә эйә булығыҙ, Ленин — Сталин эше өсөн ныҡлы көрәшселәр булырға әҙерләнегеҙ!

56. Коммунистәр һәм комсомолецтәр! Совет государствоһы ҡеүәтенең артабан үҫеүе өсөн, беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөү өсөн көрәшеүселәрҙең беренсе сафтарында булығыҙ!

57. Йәшәһен бөйөк Совет Социалистик Республикалар Союзы — беҙҙең илебеҙ халҡтары дуҫлығының һәм данының таянысы, бөтә донъяла тыныслыҡтың ҡаҡшамаҫ терәге!

58. Йәшәһен совет халҡының һуғыштарҙа сыныҡҡан авангарды, беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы бөйөк коммунистәр партияһы, Ленин — Сталин партияһы!

59. Ленин байрағы аҫтында, Сталин юлбашсылығында — алға коммунизм еңеүенә!

Бөтә Союз Коммунистәр (большевиктәр) Партияһының Үҙәк Комитеты.

ӨФӨ ҠАЛА ПАРТИЯ ОЙОШМАҺЫНЫҢ X КОНФЕРЕНЦИЯҺЫ

ВКП(б) ҠАЛА КОМИТЕТЕНЕҢ ЭШЕ ТУРАҺЫНДА

Партия ҡала комитетенең секретаре Х. М. Мостафин докладьı

1951 йылдың 25—26 апрелендә Өфө коммунистарының X ҡала конференцияһы булды. Оҙаҡҡа һуҙылған ҡул сабыуҙар аҫтында делегаттар бер күңелдән иптәш Сталин етәкселегендәге ВКП(б) Үҙәк Комитеты политбюроһы составын конференцияның Почетлы президиумы итеп һайланылар.

Конференция делегаттары көн тәртибендәге беренсе мәсьәлә буйынса ВКП(б) ҡала комитетенең эше тураһында ҡала комитеты секретаре иптәш Мостафиндең отчет докладын тыңланылар. Унан һуң ревизия комиссияһы председателе иптәш Ададуров доклад менән сығыш яһаны.

Түбәндә иптәш Мостафиндең докладын урынлаштырабыҙ. Доклад ҡыҫҡартылған стенограммала бирелә.

* * *

Иптәштәр!

Ҡала партия ойошмаһының IX конференцияһы булып үткәндән һуң бер йыл һәм 3,5 ай ваҡыт үтте. Был осор беҙҙең илебеҙҙең эшендә, шулай уҡ халыҡ-ара аренала ҙур тарихи ваҡиғалар менән тулы булды.

Бөйөк Ленин — Сталин партияһы тарафынан етәкселек ителгән һәм рухландырылған совет халҡы һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡ планды уңышлы үтәне.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды үтәлеү йомғаҡтары тураһында СССР Государство план комитетенең һәм Үҙәк Статистика Управлениеһының ошо көндәрҙә иғлан ителгән белдереүен бөтә совет халҡы ғәйәт ҙур ҡәнәғәтләнеү һәм законлы ғорурлыҡ тойғоһо менән ҡаршыланы.

СССР-ҙың бөтә промышленносының валовой продукцияһын етештереү һуғышҡа тиклемге кимәлдән, биш йыллыҡ план менән билдәләнелгән 48 процент урынына 73 процентҡа уҙып китеүҙе, ауыл хужалығында ла валовой продукцияның һуғышҡа тиклемге кимәле уҙып кителде.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты уңышлы үтәп, совет халҡы яңы ғәйәт ҙур бурыстарҙы тормошҡа ашыра, коммунистик төҙөлештең сталинса планын үтәй башланы.

Волгала, Аму-Дарьяла, Днепрҙа һәм Донда бөйөк төҙөлештәр планын тормошҡа ашырыу буйынса эштәр ҙур күтәренкелек менән йәйелдерелә.

1951 йылға СССР Верховный Советының икенсе сессияһы тарафынан раҫланған Государство бюджеты беҙҙең халҡыбыҙҙың тормош интерестарына, социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан нығытыу бурыстарына, илебеҙҙә тыныс коммунистик төҙөлеш бурыстарына яуап бирә.

Беҙҙең илебеҙҙең коммунизмға табан барыу юлында большевиктәр партияһы етәкселегендә, халыҡтарҙың бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталин юлбашсылығында еңгәшелгән тарихи еңеүҙәре беҙҙең илебеҙ халыҡтарының мораль-политик берҙәмлеген һәм дуҫлығын тағы ла күберәк нығытты. Был, государство власының органдарын һайлаған осорҙа үҙенең асыҡ күҙәнәнешен тапты. Һайлауҙар совет халҡының ҡаҡшамаҫ берҙәмлегенең һәм большевиктәр партияһы тирәһенә һәм халыҡтар юлбашсыһы иптәш Сталин тирәһенә туплангандығының ҡеүәтле демонстрацияһына әүерелде.

Өфө ҡала партия ойошмаһы, партияның IX ҡала һәм XXII өлкә конференцияларының ҡарарҙарын үтәп, отчет осорондә партия Үҙәк Комитеты һәм Совет хөкүмәте тарафынан ҡуйылған хужалыҡ һәм политик бурыстарҙы үтәүгә ҡала хеҙмәтсәндәрен мобилизациялау буйынса ҙур ойоштороу һәм агитацион-пропагандистик эш башҡарҙы һәм үҙенең X конференцияһына ВКП(б) Үҙәк Комитеты тирәһенә, һөйөклө юлбашсы һәм уҡытыусы иптәш Сталин тирәһенә тағы ла нығыраҡ һәм тығыҙыраҡ тупланып килде.

Промышленносҡа етәкселек итеү буйынса үҙенең практик эшендә партия ҡала комитеты ВКП(б) райкомдарының эшмәкәрлеген партияның тәүге ойошмаларының ойоштороусанлыҡ ролен һәм производствола коммунистарҙың авангардлыҡ ролен күтәреүгә, хужалыҡ ойошмаларының эшмәкәрлегенә партия контролен көсәйтеүгә, массаларҙы политик-тәрбиәләү эше кимәлен күтәреүгә юнәлтте.

Ҡала промышленносы биш йыллыҡ планды уңышлы тамамланы. 1950 йылда валовой продукция сығарыу, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 63 процентҡа үҫте. Ҡаланың 30 предприятиеһы үҙҙәренең биш йыллыҡ пландарын срогынан алда — 3,5 һәм 4 йыл эсендә үтәне, улар араһында: судноларҙы ремонтлау, электр оборудованиеларе, фанера, телефон аппараттары, 2-се номерлы таҡта ярыу заводтары, кабель заводы, биофабрика һәм башҡалар бар.

Ҡалала промышленность производствоһының үҫеүе, башлыса, технология процестарын камиллаштыреү, производство майҙандарын тағы ла рациональлерәк файҙаланыу һәм оборудованиенан берәмегенән продукция алыуҙы арттырыу иҫәбенә үткәрелде.

Ҡала промышленносы валовой продукция етештереү буйынса 1950 йылғы планды 106,3 процентҡа, йәки үткән йылға ҡарағанда, 17 процентҡа арттырып үтәне. Валовой продукция етештереү буйынса 1951 йылдың I квартал планы ҡала буйынса 103,7 процентҡа үтәлде.

Ҡала предприятиеларында эшләүселәрҙең 95 процент самаһы ярыша, уларҙың 40 проценттан артығыраҡы — стахановсы.

Предприятиеларҙа партия ойошмаларының ойоштороусанлыҡ һәм политик эше арҡаһында бик күп һанда производство новаторҙары, рационализаторҙар һәм уйлап табыусылар үҫеп сыҡты. 1950 йылда 3 мең самаһы рационализаторлыҡ тәҡдиме индерелде һәм тик 1300 тәҡдимдә индереүҙән генә лә 8 миллион һумдан артығыраҡ шартлы экономия алынды.

Күп кенә предприятиеларҙа алдынғы стахановсы эш тәжрибәләрен өйрәнеү һәм таратыу буйынса инженер Ковалев башланғысы киң таратылды.

Ҡала промышленносының эшендә өлгәшелгән ыңғай һөҙөмтәләр менән бер рәттән, беҙҙә сериоз етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Партияның ҡала комитеты һәм райкомдары партияның IX ҡала конференцияһының ҡарарын тулыһынса үтәүгә өлгәшмәнеләр һәм техник-экономик күрһәткестәр буйынса производство пландарын һәм заданиеларын һәр бер предприятиеның үтәүен тәьмин итмәнеләр.

Партияның ҡала комитеты һәм райкомдары 1951 йылдың I кварталында ла айырым предприятиеларҙың артта ҡалыуын бөтөрөүгә өлгәшмәнеләр. Быйыл беренсе кварталда валовой продукция етештереү буйынса планды 18 предприятие үтәмәне. Улар араһында судноларҙы ремонтлау, һыра ҡайнатыу, таҡта ярыу заводтары, 8-се Март исемендәге фабрика, биофабрика, «Хлебопек-кондитер», «Местпром», XVIII партсъезд исемендәге артелдәр һәм башҡалар бар.

Изделиеларҙың билдәләнелгән номенклатураһы һәм ассортименты, техник-экономик күрһәткестәр буйынса государство заданиеларын байтаҡ предприятиеларҙың үтәмәүе ҡала промышленносы эшендә серьез етешһеҙлек булып тора.

Бөтә ҡала партия ойошмаһының бурысы предприятиелар эшендәге серьез етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бөтөрөүҙән һәм промышленность эшенең артабанғы күтәрелешенә өлгәшеүҙән тора.

1950 йылда транспорт предприятиелары 1949 йылға ҡарағанда, юғарыраҡ кимәлдә эшләнеләр һәм йөк ташыу планын байтаҡ арттырып үтәнеләр.

Өфө тимер юлы бүлексәһе былтыр йөк ташыуҙың государство планын арттырып үтәне. Бүлексә йөк тейәү һәм бушатыу буйынса биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәүгә өлгәште.

Бүлексәлә хәл иткес узелдар — Өфө һәм Дим узелдары коллективтарының тағы ла берҙәмерәк эшләүе 1950 йылда юл бүлексәһе эшенең яҡшырыуына булышлыҡ итте.

Отчет осоронда партия ҡала комитеты тимер юл предприятиеларының эшенә ҙур иғтибар бирҙе һәм уларҙың эшендәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә практик ярҙам күрһәтте. Юл бүлексәһенең эше тураһындағы мәсьәлә партия ҡала комитетының пленумында тикшерелде. Өфө һәм Дим паровоз депоһы партия ойошмаларының һәм политбүлектең эше тураһында мәсьәләләр ВКП(б) ҡала комитетенең бюроһында тикшерелделәр. Был, предприятиеларҙа тимер юлсылар алдына ҡуйылған бурыстарҙы хәл итеүгә юнәлтелгән ойоштороу-партия һәм партия-политик эш кимәлен бер ни тиклем күтәрергә мөмкинлек бирҙе.

Шуның менән бер рәттән, партияның ҡала комитеты, Дим һәм Молотов райкомдары юл бүлексәһенең һәм узелдарҙың эшендә бөтә эксплуатацион күрһәткестәр буйынса заданиеларҙы тулыһынса һәм арттырып үтәүҙе тәьмин итеүҙә тейешле аныҡлыҡҡа һәм берҙәмлеккә өлгәшмәнеләр әле.

Быйыл беренсе кварталда бүлексә өлгәшелгән эш күрһәткестәрен кәметте һәм йөк ташыу, бушатыу планын үтәмәне, шулай уҡ поездарҙы йөрөтөү графигын үтәү эше лә насарайҙы.

Отчет осоронда ҡалала капиталь төҙөлеш буйынса ҙур эштәр йәйелдерелде. Партияның ҡала комитеты һәм район комитеттары төҙөлеш ойошмалары эшенә ҙур иғтибар бирҙеләр. Ҡалала капиталь төҙөлештә яҡшыртыу саралары тураһында мәсьәлә ҡала комитеты пленумында, ә төҙөлеш ойошмаларының эше бер нисә тапҡыр партияның ҡала комитеты һәм район комитеттары бюроһында тикшерелде.

Ләкин партияның ҡала комитеты IX партия конференцияһының ҡарарҙарын тулыһынса үтәүгә өлгәшмәне һәм бөтә төҙөлеш ойошмаларының ебәрелгән средстволарҙы тулыһынса үҙләштереү һәм төҙөлеш объекттарын эксплуатацияға тапшырыу буйынса уңышлы эшләүҙәрен тәьмин итмәне. Ҡалала торлаҡ йорттары һәм культура-тормош объекттары төҙөү айырыуса артта ҡала.

1950 йылда ҡаланың бөтә коммуналь предприятиелары үҙҙәренең производство пландарын үтәнеләр, рентабелле эшләнеләр һәм 900 миллион һумдан артығыраҡ файҙа бирҙеләр. Ҡаланы төҙөкләндереү буйынса байтаҡ эштәр башҡарылды.

Ләкин ҡала хужалығының һәм ҡаланы төҙөкләндереүҙән үҫеше алға китеүсе ҡаланың үҫеүсән һәм халыҡты культура-тормош яғынан хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу буйынса талаптарҙан бик ныҡ артта ҡала әле. Партияның ҡала комитеты, ҡала һәм район Советтары исполкомдарының, коммуналь предприятиеларҙан һәм ҡала хужалығын үҫтереү буйынса хужалыҡ ойошмаларының эшен тамырынан яҡшыртыуға өлгәшә алмауы был артта ҡалыуҙа төп сәбәп булып тора.

Ҡала комитеты дауалау учреждениеларенең эшен һәм халыҡҡа медицина ярҙамы күрһәтеүҙе яҡшыртыу буйынса күп кенә саралар күрҙе. Ләкин был өлкәлә серьез етешһеҙлектәр бик күп әле. Беҙҙә бигерәк тә Ленин һәм Молотов райондарында дауалау учреждениеларының селтәре бик әкрен үҫә. Халыҡҡа медицина хеҙмәте күрһәтеү тейешенсә юлға һалынмаған.

Ҡала комитеты сауҙа ойошмаларының эшен бер ни тиклем яҡшыртты. Ләкин ҡалала сауҙа ойоштороуҙың кимәле халыҡтың үҫә барған талаптарына яуап бирмәй. 1950 йылда һәм ошо йылдың беренсе кварталында тауар әйләнеше планы үтәлмәне. Ҡала һәм район Советтарының исполкомдары сауҙа ойошмаларына кәрәгенсә етәкселек итмәйҙәр.

Ҡала партия ойошмаһы алдында торған хужалыҡ-политик бурыстарҙы үтәү партия-ойоштороу эшен күтәреүҙе, партия ойошмаларының эш стилен һәм методын артабан камиллаштыреүҙе, уларҙан массалар менән бәйләнеште киңәйтеүҙе һәм нығытыуҙы талап итте.

IX ҡала партия конференцияһының ҡарарҙарын үтәй барып, партияның ҡала комитеты үҙенең иғтибарын партияның эске эшен яҡшыртыуға, партияның тәүге ойошмаларын нығытыуға һәм хужалыҡ шулай уҡ культура төҙөлешенең бөтә участкаларында уларҙың ролен күтәреүгә юнәлтте.

Партия-ойоштороу һәм партия-политик эш мәсьәләләре партияның ҡала һәм район комитеттарының бюро һәм пленум ултырыштарында, тәүге ойошмаларҙың йыйылыштарында йышыраҡ тикшерелә башланылар. Был мәсьәләнең ВКП(б) ҡала комитетының VI пленумында тикшерелеүе ҙур әһәмиәткә эйә булды, был пленумдың ҡарарҙары һуңынан ҡалалағы бөтә тәүге ойошмаларҙың йыйылыштарында тикшерелде.

Тәүге ойошмаларҙың йыйылышы бөтә ойоштороу-партия эшендә мөһим урын тота. Отчет осоронда партияның ҡала комитеты район комитеттары һәм тәүге ойошмалар партия йыйылыштарын әҙерләүгә һәм үткәреүгә күберәк иғтибар бирә башланылар. Күпселек партия ойошмаларында улар регуляр рәүештә үткәрелә башланы, уларға партия-политик һәм хужалыҡ мәсьәләләре ҡуйып тикшерелде. Был коммунистарҙың активлыған күтәреүгә һәм эштәге кәмселектәрҙе тәнҡитләүҙе һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе йәйелдереүгә ярҙам итте.

Шуның менән бергә, әлегә тиклем ҡаланың күп кенә тәүге ойошмаларында партия йыйылыштары регуляр үткәрелмәйҙәр, йәки эштәге кәмселектәрҙе большевистик тәнҡитләүҙе һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе тейешенсә йәйелдермәй, ойоштороу һәм политик яҡтан түбән кимәлдә үтәләр. Күп кенә ойошмаларҙа әле һаман да йыйылыштарҙа, башлыса, юғарынан тәҡдим ителгән мәсьәләләр генә ҡуйыла һәм үҙҙәренең партия ойошмалары тормошонан булған мәсьәләләр аҙ тикшерелә.

Отчет осоронда партияның ҡайһы бер ойошмаларында йыйылыштарҙың айҙар буйынса үткәрелмәүе, күп кенә ойошмаларҙа бик мөһим мәсьәләләрҙең һуңлап, түбән кимәлдә тикшерелеү факттары аҙ булманы. Киров һәм Жданов райондарында был айырыуса күп булды.

Быларҙың бөтәһе лә ВКП(б) ҡала комитетенең һәм район комитеттарының партия йыйылыштарын әҙерләү һәм үткәреү практикаһын өйрәнеү һәм дөйөмләштереү менән насар шөғөлләнгәнлектәрен, был мәсьәләләрҙе бюро ултырыштарында һәм пленумдарҙа һирәк тикшергәнлектәрен, был эштә булған кәмселектәрҙе бөтөрөүгә ҡарата оператив саралар ҡабул итмәгәнлектәрен күрһәтә.

Отчет осоронда партияның ҡала комитеты, район комитеттары партия ойошмалары секретарҙарына үҙҙәренең етәкселеген бер ни тиклем яҡшырттылар, партия эше тәжрибәһе менән уртаҡлашыу буйынса улар менән семинар занятиелары һәм киңәшмәләр үткәрә башланылар. Семинарҙарҙа докладтар менән район комитеттары секретарҙары һәм ҡала комитеты работниктары күберәк сығыш яһай башланылар.

Ләкин ВКП(б)-ның ҡала комитеты тарафынан партия эшенең ошо участкаһына контролдең булмауы һөҙөмтәһендә был мәсьәләлә әлегә тиклем серьез етешһеҙлектәр бар. ВКП(б)-ның Киров район комитеты партия ойошмалары секретарҙарының уҡыуына иғтибарҙы сиктән тыш аҙ бирә. Партияның Жданов һәм Молотов район комитеттары семинар занятиеларын регуляр үткәрмәнеләр. Партия ойошмаһы секретарҙары менән семинарҙар йыш ҡына түбән кимәлдә үткәрелә.

ВКП(б)-ның ҡала комитеты, район комитеттары һәм тәүге ойошмалар, цех партия группаларына күберәк иғтибар бирә башланылар. ВКП(б)-ның Ленин һәм Молотов район комитеттары цех партия ойошмалары секретарҙары һәм партгрупоргтар менән эшләүҙе бер ни тиклем яҡшырттылар, был райкомдар улар менән семинар занятиеларын систематик рәүештә үткәрәләр.

Электр оборудованиелары заводы, тукыу комбинаты һәм башҡа предприятие партия ойошмаларының секретарҙары ла партия эшенең был участкаһына күберәк иғтибар бирә башланылар, һөҙөмтәлә был предприятиеларҙа цех партия ойошмаларының һәм партия группаларының роле күтәрелде. Улар предприятиеларҙың эшен яҡшыртыуға күберәк йоғонто яһай башланылар.

Ошоноң менән бергә, ВКП(б)-ның ҡала комитеты, район комитеттары һәм партияның тәүге ойошмаларының секретарҙары цех партия ойошмаларының һәм партия группаларының эшен етерлек тиклем яҡшыртмайҙар.

Комсомолдың ҡала һәм район комитеттары, тәүге ойошмалар менән йомшаҡ бәйләнгәндәр, уларҙың эштәренең йөкмәткеһенә тәрән үтеп инмәйҙәр йөкмәткеһеҙлектәргә килешеп ҡарайҙар.

Комсомолда эштең түбән кимәлдә булыуы ВКП(б)-ның ҡала комитетының, район комитеттарының һәм партияның тәүге ойошмаларының комсомолға тейешенсә етәкселек итмәүҙәре һәм уны предприятиеның хужалыҡ тормошонда актив ҡатнашыуға нығлап ылыҡтырмауҙары, комсомол ойошмаларын предприятиелар һәм учреждениелар эшенең төп мәсьәләләренә юнәлтмәүҙәре менән аңлатыла.

Партияның ҡала комитеты профсоюз ойошмаларының эшмәкәрлеген социалистик ярышты бөтә саралар менән йәйелдереүгә, хеҙмәттең яңы методтарын индереүгә һәм хеҙмәтсәндәрҙең культура-тормош шарттарын яҡшыртыуға юнәлтте.

Профсоюз эшенең кимәлен күтәреүгә юнәлтелгән күп кенә саралар үткәрелде. Туҡыу комбинаты, электр оборудованиелары, телефон аппараттары, яҙыу машиналары заводтары, 8-се Март исемендәге фабрика һәм башҡа предприятиеларҙың профсоюз ойошмалары яҡшы ғына эшләй башланылар.

Ләкин кабель заводы, электросеть һәм башҡа ҡайһы бер предприятиеларҙың профсоюз ойошмалары профсоюздың X съезы ҡарарҙарын ҡәнәғәтләнерлек үтәмәйҙәр һәм үҙҙәренә йөкмәтелгән бурыстарҙы йомшаҡ үтәйҙәр. Улар үҙҙәренең эшмәкәрлеген ағымдағы ваҡ эштәр менән сикләйҙәр.

Күп кенә профсоюз ойошмалары производство кәңәшмәләренең әһәмиәтен баһалап еткермәйҙәр, уларҙы тар кругта производство мәсьәләләрен тикшереү менән алыштыралар. Иң яҡшы сифатлы продукция сығарыу һәм материалдарға экономия яһау өсөн ярышты йомшаҡ ойошторалар. Хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу һәм хеҙмәтсәндәрҙең культура-тормош шарттарын яҡшыртыу менән етерлек тиклем шөғөлләнмәйҙәр. Коллектив договорҙарҙың үтәлешенә һәм хеҙмәт законын һаҡлауға контролде тейешенсә тормошҡа ашырмайҙар.

ВКП(б)-ның ҡала комитеты, район комитеттары һәм партияның тәүге ойошмалары профсоюз ойошмаларына үҙҙәренең етәкселеген тамырынан яҡшыртырға һәм хужалыҡ-политик бурыстарҙы хәл итеүҙә уларҙың эшмәкәрлеген активлаштырырға тейештәр.

ВКП(б) Өлкә Комитетының II пленумы ҡарары етәксе кадрҙарҙы һайлап алыу, урынлаштырыу һәм тәрбиәләү буйынса эште яҡшыртыуҙа бөтә ҡала партия ойошмаһы өсөн мөһим документ булып торҙо.

Партияның Өлкә Комитеты бюроһы пленум ҡарарының үтәлеше хаҡында беҙҙең отчетты тыңлап беҙҙең кадрҙар менән булған эшебеҙҙәге етешһеҙлектәргә һәм хаталарҙы серьез күрһәтеп үтте һәм партия эшенең был мөһим тармағын ҡырҡа үҙгәртеп ҡороуҙы талап итте. Өлкә Комитет бюроһы ҡарарынан һуң партияның ҡала комитеты етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса күп кенә практик саралар үткәрҙе. Ҡала комитеты партия һәм совет аппаратын үҫә барыусы кадрҙар менән нығытыуға ҡарата саралар күрҙе, күп кенә ҡатын-ҡыҙҙарҙы етәксе эшкә урлатте. Айырым хужалыҡ һәм профсоюз ойошмалары һәләтле работниктар менән нығытылды. Промышленноста эшләүсе етәксе кадрҙарҙың экономик белемдәрен күтәреү маҡсатында экономик мәсьәләләр буйынса ҡала лекторийы ойошторолдо, унда 300-ҙән дә артығыраҡ кеше йөрөй.

Ләкин партияның ҡала комитеты кадрҙар менән эштең ҡырҡа яҡшырыуына өлгәшмәне әле. Ҡала комитетының бүлектәре кадрҙарҙы практик эштә өйрәнеү менән ысын-ысынлап шөғөлләнмәйҙәр, ВКП(б)-ның район комитеттарында, партияның тәүге ойошмаларында кадрҙар менән эшләүгә етерлек анализ яһамайҙар һәм дөйөмләштермәйҙәр. Үрләтеү өсөн кәрәкле резерв тупламайҙар.

Ҡала комитеты етәксе эштәргә төп милләт кадрҙарын йомшаҡ үрләтә. Ҡатын-ҡыҙҙар етәкселек эшенә йомшаҡ үрләтеләләр.

Партияның ҡала комитеты һәм район комитеттары кадрҙарҙы практик эштә тикшереү менән көн һайын шөғөлләнмәйҙәр һәм уларҙың эшендәге етешһеҙлектәрҙе белмәйҙәр, уларға етешһеҙлектәрҙе һәм хаталарҙы бөтөрөүҙә үҙ ваҡытында ярҙам итмәйҙәр, уларҙы большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү нигеҙендә йомшаҡ тәрбиәләйҙәр. Етәксе кадрҙарҙың идея-политик кимәлен һәм экономик белемдәрен күтәреү менән ҡәнәғәтләнерлек шөғөлләнмәйҙәр.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының күрһәтмәләрен һәм IX ҡала партия конференцияһының ҡарарҙарын үтәй барып, ВКП(б)-ның ҡала комитеты, район комитеттары һәм ҡаланың тәүге ойошмалары отчет осоронда коммунистарҙы һәм партияһыҙ активты марксистик-ленинса тәрбиәләү эшен байтаҡ яҡшыртыуға өлгәштеләр. Партия мәғарифе селтәре эшенең сифаты һәм идея-теоретик кимәле, иң элек, пропагандистар составына бәйле булыуын иҫәпкә алып, ВКП(б)-ның ҡала комитеты һәм район комитеттары, ҡаланың тәүге партия ойошмалары пропагандистарҙы һайлап алыуға һәм уларҙың идея-теоретик кимәлдәрен һәм методик әҙерлектәрен күтәреүгә ҙур иғтибар бирәләр.

Пропагандистарҙың идея-теоретик кимәлен һәм методик әҙерлектәрен күтәреү маҡсатында үткән йылдың йәйендә ВКП(б)-ның ҡала комитеты пропагандистарҙың өс айлыҡ курсын үткәрҙе. Курстарҙа булмаған пропагандистар өсөн сентябрь айында төп эштән айырылған хәлдә ике аҙналыҡ курстар үткәрелде. Был курстарҙа бөтәһе 417 кеше уҡыны. Бынан тыш уҡыу йылы барышында ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттары эргәһендә пропагандистарҙың һәр бер төркөмө өсөн айырым даими хәрәкәт итеүсе семинарҙар эшләнеләр һәм эшләйҙәр.

Ағымдағы уҡыу йылында партия мәғарифе селтәрен комплектовать итеү шулай уҡ яҡшыраҡ үткәрелде. Коммунистарҙың дөйөм белем кимәлдәренә һәм политик әҙерлектәренә ярашлы рәүештә 105 политик мәктәп, төп типтағы 382 түңәрәк, юғарылатылған типтағы 147 түңәрәк, И. В. Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 93 түңәрәк, биш район партия мәктәбе һәм ВКП(б) ҡала комитеты эргәһендә марксизм-ленинизмдең киске университеты ойошторолдо. Марксистик-ленинса уҡыуҙың төрлө формалары менән 17514 кеше, шул иҫәптән, 11 мең 809 коммунист солғап алынды.

Быйыл коммунистарҙың үҙ алдарына уҡыуҙарына етәкселек итеү байтаҡ яҡшы ҡуйылған. Марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен үҙ алдарына уҡыусыларға ярҙамға ВКП(б)-ның ҡала комитеты, район комитеттары һәм ҙурыраҡ партия ойошмалары эргәһендә 18 лекторий ойошторолдо, уларҙа систематик рәүештә ВКП(б) тарихы, диалектик һәм тарихи материализм һәм политик экономия буйынса лекциялар уҡыла. Коммунистарҙың үҙ алдарына уҡыуҙарына көндәлек ярҙам күрһәтеү өсөн штаттан тыш 312 консультант һайлап алынды һәм ВКП(б) райкомдарының бюроларында раҫланды.

Быларҙың бөтәһе лә партия уҡыуҙарын үткән йылдарға ҡарағанда, байтаҡ яҡшыртыуҙы тәьмин итте. Партия мәғарифе селтәренең эшендә ойошҡанлыҡ күтәрелде һәм үткәрелгән занятиеларҙың сифаты яҡшырҙы. Был айырыуса телефон аппараттары, электр оборудованиелары, кабель, судноларҙы ремонтлау заводтарының, «Башнефть» берекмәһенең, Ағиҙел йылға пароходствоһының, Һаулыҡ һаҡлау министерствоһының, Государство резервтары управлениеһының партия ойошмаларында айырыуса ныҡ һиҙелә.

Ләкин шуның менән бергә, партия мәғарифе өлкәһендә беҙҙең серьез етешһеҙлектәребеҙ бар. Күп кенә партия ойошмалары, уҡыу йылын яҡшы ғына башлап ебәрһәләр ҙә, коммунистарҙың һәм партияһыҙ активтың артабан уҡыуының барышына тейешле етәкселекте тәьмин итмәнеләр. Паровоздар ремонтлау заводы, макарон фабрикаһы, 6-сы номерлы төҙөлеш контораһы, Социаль тәьминәт министерствоһы, Димдәге связь дистанцияһы, беренсе пищеторг һәм башҡа партия ойошмаларында ошо ваҡытҡа тиклем түңәрәктәрҙә һәм политик мәктәптәрҙә занятиеларҙың өҙөлөүен, йөрөштең түбән булыуын, тыңлаусыларҙың һәм хатта пропагандистарҙың да занятиеларға әҙерлекһеҙ килеүҙәрен шуның менән генә аңлатырға мөмкин.

Хәҙер ҡала партия ойошмаһының бурысы партия уҡыуҙарындағы етешһеҙлектәрҙе аҙағына тиклем бөтөрөүҙән һәм партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын ойошҡанлыҡ менән, юғары идея-теоретик кимәлдә тамамлауҙы тәьмин итеүҙән тора.

Агитацион-массовый эш мәсьәләләре партия ҡала комитетенең бюроһында бер нисә тапҡыр тикшерелде һәм асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса практик саралар күрелде. Быларҙың бөтәһе лә хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эштең кимәлен күтәреүгә һәм уларҙы алда торған хужалыҡ политик бурыстарҙы үтәүгә мобилизациялауға ярҙам итте.

Совет власының етәксе органдарына һайлау кампанияһы осоронда ҡала хеҙмәтсәндәре араһында ун меңдән артыҡ агитаторҙар, лекторҙар һәм докладсылар актив агитацион-массовый эш алып барҙылар, шуларҙан 6 меңдән артыҡ агитатор халыҡтың торған урындарында эш алып барҙылар.

Агитацион-массовый эштең былай киң колас алыуы һайлауҙарҙы юғары идея-политик кимәлдә үткәреүҙе тәьмин итте һәм ҡала хеҙмәтсәндәренең ҡеүәтле хеҙмәт һәм политик активлегенең яңы күтәрелешен тыуҙырҙы.

Ләкин күп кенә предприятиеларҙың һәм учреждениеларҙың партия ойошмалары политик агитацияға ысынлап етәкселек итмәйҙәр, агитаторҙарҙы үҫтермәйҙәр һәм тәрбиәләмәйҙәр.

Хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүҙең һәм уларҙы хужалыҡ һәм политик бурыстарҙы үтәүгә мобилизациялауҙың мөһим средствоһы булған политик докладтарҙың әһәмиәтен баһалап еткермәү ҡала партия ойошмаларының агитацион-массовый эштәрендәге етешһеҙлектәрҙең береһе булып тора.

«Правда» газетаһының 22 март һанында урынлаштырылған «Эшсе[illegible] йыйылыштарында политик докладтар» тигән корреспонденцияла беҙҙең [illegible] етәксе работниктарыбыҙҙың хеҙмәтсәндәр алдында политик докладтар менән сығыш яһамауҙары йәки байрам датаһы буйынса ғына сығыш яһауҙары ҡаты [illegible] ҙел тәнҡитләнә. «Правда» беҙҙә ВКП(б) ҡала һәм район комитеттарының [illegible] тыш докладсылар группаларының ҡәнәғәтләнерлек етәкселек итмәүен, үткәрелгән докладтарҙың сифатын [illegible] идея-политик кимәленә насар контроль [illegible] яһауыбыҙ өсөн ғәҙел тәнҡитләй. ВКП(б) ҡала комитетының бюроһы, мәҡәләне тикшереп, был эште яҡшыртыу саралары билдәләне.

Агитацион-массовый эштәрҙә бөтә етешһеҙлектәр шуның менән аңлатыла: ВКП(б)-ның ҡала, район комитеттары һәм уларҙың пропаганда һәм агитация бүлектәре партия эшенең был мөһим участкаһын даими рәүештә иғтибарҙа тотмайҙар, агитколлективтарҙы нығытыу һәм тәрбиәләүҙә партияның тәүге ойошмаларына тейешле ярҙамды күрһәтмәйҙәр, хеҙмәтсәндәр араһындағы массовый-политик эштәрҙәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү эшенә ваҡытында саралар күрмәйҙәр.

Иптәштәр! Ағымдағы йылдың февраль һәм март айҙарында 424 партия ойошмаһында отчет-һайлау йыйылыштары һәм апрель башында — район партия конференциялары булып үтте. Партия йыйылыштары һәм район конференциялары коммунистарҙың юғары активлыҡ обстановкаһында, большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү билдәһе астында, партия органдарына юғары талаптар ҡуйыу билдәһе аҫтында үттеләр.

Район партия конференцияларының делегаттары һәм унда ҡатнашҡан коммунистар, хужалыҡ һәм культура төҙөлеше өлкәһендә өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе билдәләү менән бергә, хужалыҡ, профсоюз һәм партия органдарының эшендәге етешһеҙлектәрҙе бөтә большевистик туранлыҡ менән астылар, етәксе работниктарҙың уларҙың *эшендәге етешһеҙлектәр һәм хаталар өсөн юғары талап* ҡуйҙылар, партия комитеттарының эш стилен һәм методтарын артабан камиллаштырырға, уларҙың массалар менән бәйләнешен киңәйтеү һәм нығытыуҙың кәрәк булыуын күрһәттеләр.

Отчет осоронда партияның ҡала комитеты үҙ эшендәге етешһеҙлектәр менән партияның тәүге ойошмалары менән йомшаҡ бәйләнеш тотоуы өсөн «Правда» газетаһында, партия Өлкә Комитеты бюроһында, ҡала партия активының йыйылыштарында ғәҙел тәнҡиткә алынды. Был тәнҡиттән һуң ҡала комитеты асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса күп кенә саралар үткәрҙе һәм ҡайһы бер ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәште.

Ләкин партия ҡала комитеты үҙ эшен тулыһынса үҙгәртеп ҡормаған һәм үҙенең практик эшендәге күп етешһеҙлектәрҙе әле бөтөрөп еткермәгән [illegible] ләп үтергә кәрәк.

Ҡала партия ойошмаһының бурысы ойоштороу-партия һәм партия-политик эштең кимәлен бөтә яҡлап күтәрергә, юғары органдарҙың ҡарарҙарының үтәлешен тикшереүгә күберәк иғтибар бирергә [illegible] реүҙән һәм үҙ ҡарарҙарының үтәлешен масса араһында ойоштороу эше менән нығытыуҙан тора.

Партияның ҡала комитеты ҡала партия ойошмаһында большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе етерлек тиклем йәйелдермәне һәм партия ойошмалары алдында торған бурыстарҙы үтәү өсөн көрәштә бөтә коммунистарҙың актив ҡатнашыуына өлгәшмәне.

Был ғына ла түгел, беҙҙә әле айырым хужалыҡ һәм партия етәкселәренең тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе йәйелдереүгә ярҙам итмәү түгел, бәлки тәнҡитте туранан-тура ҡыҫыу һәм тәнҡитләүселәрҙе эҙәрләүҙәре тураһында факттар аҙ түгел. Дөрөҫ, партияның ҡала комитеты тәнҡитте ҡыҫыусыларға ҡарата ҡаты саралар күрҙе, ләкин партияның ҡала комитеты үҙе лә түбәндән килгән тәнҡиткә һәр ваҡытта ла үҙ ваҡытында иғтибар итмәне.

Тураһын әйтергә кәрәк, ҡала партия ойошмаһында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү һаман да тейешле кимәлдә түгел әле.

Большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү совет йәмғиәтенең үҫешендә төп хәрәкәт көсө һәм эштә булған кәмселектәрҙе бөтөрөүҙә төп ҡорал булып торғанлығын хәтерҙә тотоп, ҡала партия ойошмаһы тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе бөтә саралар менән йәйелдерергә һәм ошо нигеҙҙә ҡала партия ойошмаһы алдында торған бурыстарҙың уңышлы үтәлеүен тәьмин итергә тейеш.

Ҡала партия ойошмаһының был конференцияһы большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү нигеҙендә эшебеҙҙәге етешһеҙлектәрҙе аҙағына тиклем асырға һәм бөтә ҡала партия ойошмаһын коммунистик төҙөлештең ҙур һәм катмарлы бурыстарын уңышлы хәл итеүгә мобилизациялау, тип ышаныс белдерергә рөхсәт итегеҙ.

Тыныслыкты яклауҙың Совет комитете белдереүе

Тыныслыкты яклауҙың Совет комитете Франция хөкүмәтенең Франция территорияһында Тыныслыктың Бөтә Донъя Советы эшмәкәрлегенә тыйыу тураһындағы карарына үҙенең протестын белдерә.

Был карар ысын күңелдән тыныслыкты һаклаға һәм нығытырға ынтылыусы ер шарындағы бөтә намыслы кешеләрҙең ғәҙел нәфрәтен тыуҙырҙы. Улар менән бергә беҙ ошо нәфрәткә кушылабыҙ һәм Тыныслыктың Бөтә Донъя Советының эшен эҙәү һәм шуның менән тыныслык яклылар көсөнөң үҫеүенә камасаулык итергә маташыуҙарҙың емерелеүгә дусар ителгәнлегенә шикләнмәйбеҙ. Францияларҙағы тыныслыкты яклаусылар Тыныслыктың Бөтә Донъя Советының бөйөк эшендә тыныслыкты һаклау өсөн көрәшендә уға тағы ла ҙурырак ярҙам күрһәтәсәктәр.

Тыныслыкты яклауҙың Совет комитеты Тыныслыктың Бөтә Донъя Советының Франция территорияһында эшмәкәрлегенә тыйыу тураһындағы карарҙың юкка сығарылыуын талап итә.

Беҙ совет халкы тыныслыкты яклауҙың Бөтә Донъя Советы карарҙарын тормошка ашырыу өсөн, тыныслык һәм халыктарҙың иминлеге өсөн тағы ла нығыраҡ көрәшәсәкбеҙ, тип Тыныслыктың Бөтә Донъя Советын ышандырабыҙ.

Тыныслыкты яклауҙың Совет комитеты тапшырыуы буйынса

Н. Тихонов, С. Герасимов, А. Фадеев, Н. Симонов, И. Эренбург, А. Сурков, Б. Греков, Н. Попова, А. Корнейчук, М. Котов

Сәсеүҙә машина-трактор паркын тулыһынса файҙаланырға!

Иртә культураларҙы сәсеү тамамланды

Йомағужа. (Телефон аша). Иптәш Аҙнағолов етәкселек иткән Хоҙайбирҙин исемендәге колхоз члендәре Май алды социалистик ярышына кушылып, иртә культуралар сәсеүҙе 8 көндә тамамлау өсөн йөкләмә алғайнылар.

Улар алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәнеләр. Колхоз районда беренсе булып, 25 апрелдә иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы. Яҡшы сифат менән 836 гектар майҙанда ашлык сәсеп, планды 100,4 процентка үтәне. Шулай уҡ колхозсылар 4 гектар майҙанда ағас ултырттылар. Яҙғы сәсеүҙе уңышлы уҙғарыуҙа иптәш Әмиров етәкселек иткән трактор бригадаһы яҡшы ярҙам итте. Бригада члендәре инде һуңғы культуралар сәсеү өсөн 237 гектар ер һөрҙөләр.

Алдынғы колхозға ВКП(б) райкомының һәм район Советының күсмә Кыҙыл Байрағы тапшырылды.

Районның «Ағиҙел», «Күнгәк» колхоздары ла иртә культуралар сәсеүҙе тамамланылар. Сәсеү сифаты яҡшы.

«Ағиҙел» колхозында 1144 гектар иртә культуралар сәселде. Был колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Исмәғилов етәкселек иткән трактор бригадаһы юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәтә. Ул смена нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәй.

«Политотдел», «Красный Украинец», Максим Горький исемендәге һәм башка күп кенә колхоздар ҙа иртә культуралар сәсеүҙе тамамлау алдында торалар.

Х. Әхмәтов,
ВКП(б)-ның Йомағужа райкомы секретаре.

Тракторҙар эшләмәй ултыралар

Яҙғы баҫыу эштәре башланыуҙан бер ай самаһы элек, Арҡауыл МТС-ының директоры иптәш Абдуллин ВКП(б) райкомы бюроһында:

— Беҙҙең тракторҙар яҡшы сифатлы итеп ремонтланылар һәм беҙ уларҙы колхоздарға оҙаттыҡ, мин уларҙың яҡшы эшләйәсәктәренә ныҡ ышанам, — тигәйне. Ә баҫыу эштәренең тәүге көндәре бөтөнләй киреһен күрһәтте.

— Төҙөлгән договор буйынса быйыл «Гулок» колхозының баҫыуҙарында Арҡауыл МТС-ының 3 тракторы эшләргә тейеш, — ти Таймый ауыл Советы председателе иптәш Заһидуллин, — был колхозға тәгәрмәсле ике трактор килде. Ләкин уларҙың икеһе лә эшкә ярамай. Береһенең частәре етешмәй. Икенсеһе 17 апрелдә баҫыуға культивация үткәрергә сығып, 3 тапҡыр ғына әйләнде лә туҡтаны. Был тракторҙың да шулай уҡ магнито дискалары, резбалары, магнито проводалары ярамһыҙ булып сыҡты. Был ике тракторҙы хожа ебәреү өсөн МТС-тың механигы иптәш Смолкин 3 көн буйы «тырышты», ләкин эш сығара алмай ҡайтып китте. Бына хәҙер 6 көн инде тракторҙар эшләй алмай ултыралар. Ә шул уҡ «Гулок» колхозына килергә тейешле өсөнсө трактор әле булһа мастерскойҙа ремонтланмай ултыра.

Шул уҡ Арҡауыл МТС-ының Ворошилов исемендәге колхозға беркетелгән 3 тракторы һәр төрлө техник сәбәптәр менән 6 көн буйы эшләмәй, колхоз тимерлеге алдында ултырҙы. Былар араһында ҡеүәтле дизель тракторы ла бар, ул ағыулыҡ булмау арҡаһында тик ултыра. Колхоз председателе иптәш Сураҡкинға МТС директоры иптәш Абдуллин:

— Хәҙер Сулпан посёлкаһына ат ебәрегеҙ. МТС-тың машинаһы менән Үҙән йылғаһынан сығып булмай, яр башына тиклем ағыулыҡ ебәрем, — тине. Председатель бик ашығыс рәүештә пар ат һәм кеше ебәрҙе. Ике ат һәм бер колхозсы иртәнән алып кискә ҡарағынға тиклем Үҙән йылғаһы ярында МТС-тың машинаһын көтөп торҙо. Ләкин ағыулыҡ килмәне. Унан һуң был колхозсы 2 тәүлек буйы юл йөрөп Мәрәҫим станцияһынан дизель майы алып ҡайтты.

Малояз МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа ла шул уҡ хәл. Был МТС-тың 8 тракторы Пушкин исемендәге колхозда быйыл яҙ 766 гектар ер һөрөргә һәм 1020 гектар майҙанда иртә культуралар сәсергә тейеш. Бында ла шулай уҡ 3 трактор эшләмәй ватылып ултыра. Трактор бригадаһы прицепщиктар, һыу ташыусылар һәм вагончиктар менән тәьмин ителмәгән. Колхоздың баҫыусылыҡ бригадаларында кем ҡайҙа эшләргә тейешлеген белмәйҙәр, уларға аттар, машиналар һәм сбруйҙар беркетелмәгән. Хеҙмәттең дөрөҫ ойошторолмауы арҡаһында бында күп кенә ат һәм кеше көсө файҙаланылмай.

Баҫыу эштәренең башланыуына байтаҡ ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, Пушкин, Мөхәмәтшин һәм Тельман исемендәге колхоздарҙың агитаторҙары баҫыуҙарға сыҡҡандары юҡ. Агитколлектив етәкселәре был мөһим эшкә яуапһыҙ ҡарайҙар. Районның бер генә колхозында ла тип әйтерлек стена газеталары һәм боевой листоктар сығарылмай. ВКП(б) райкомының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире Сафин, район Советы исполкомының культура учреждениелары бүлеге мөдире Зөбәиров иптәштәр был эш менән етәкселек итмәйҙәр. Сөнки иптәш Сафин ВКП(б) райкомының һәм район Советы исполкомының вәкиле итеп бер колхозға беркетелгән ҙә, унда хужалыҡ эштәре менән мәшғүлләнә. Ә иптәш Зөбәиров колхоздарға сығып йөрөү урынына, кабинетта ултырып ҡына «етәкселек» итә. Район ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы иптәш Милюков һәм башҡа специалистар ҙа баҫыу эштәренә етәкселек итмәйҙәр. Иптәш Милюков баҫыу эштәре башланғандан бирле бер генә колхозда ла булғаны юҡ.

Баҫыу эштәренең тәүге көндәрендәге был етешһеҙлектәр тиҙ төҙәтелергә тейеш.

Ш. Хәйруллин.
Салауат районы.

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Әрелетелгән колхоздарҙы нығытыуҙа урындағы Советтәр

[illegible]

Хәҙер колхозда сәсеү эштәре мәсьәләһе рәүештә алып барыла.

Ауыл Советы депутаты иптәш Бәдретдинов етәкселек иткән был колхоздың хужалығын үҫтереү өсөн резервтар ҙур. Уның 16 гектар емеш-еләк баҡсаһы бар. 2 мең төп алма ағасы быйыл алма бирәсәк. Колхозсылар баҡсанан 80 мең һум доход алыуҙы күҙҙә тоталар. 12 кешенән торған балыҡсылыҡ бригадаһы ойошторолдо, бынан да күп кенә доход алына...

Ауыл Советы менән берлектә Ғафури исемендәге колхоз Ҡарлыман йылғаһында гидроэлектростанция төҙөүҙе планлаштыра. Колхозсылар быйыл бертөрлө культуралар...

...ләләр. Советтәрҙең ауыл хужалығы буйынса даими комиссиялары был эштең торошон систематик тикшереп торалар. Малсылыкты үҫтереү мәсьәләләре сессияларҙа ҡарала. Шулай ҙа районның ауыл Советтәренә был өлкәлә йәшәп килгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса күп кенә саралар күрергә кәрәк әле.

Беҙ төп иғтибарҙы социалистик баҫыуҙарҙың урожайлылығын артабан күтәреү, общественный малсылыкты үҫтереү, һәм уның продуктивлеген арттырыу өсөн көрәшкә юнәлтәбеҙ. Был бурыстарҙы уңышлы хәл итеү колхоз хужалығының үҫеүен һәм сәскә атыуын, колхозсыларҙың мул тормошлолоғон тәьмин итәсәк.

F. Рәфиков.
Ҡырмыҫҡалы район Советы исполкомы председателе.

Май байрамын каршылап

Ново-Троицк МТС-ы механизаторҙары Май байрамын иртә культуралар сәсеүҙе тамамлау менән каршылау өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерҙеләр.

Быйыл МТС үҙе хеҙмәтләндергән колхоздарҙа тракторҙар көсө менән 9000 гектар [illegible] 12 мең 200 гектар майҙанда культивация, 2200 гектар майҙанда яҙғы һөрөү эштәрен башҡарасаҡ.

[illegible] ...мин итеү өсөн трактор бригадаларына даими ярҙам күрһәтеү маҡсатында участка механиктарынан һәм агрономдарҙан махсус бригадалар төҙөлдө. Был бригадалар, 3 зонаға бүленеп, трактор бригадаларын хеҙмәтләндерәләр. Алдынғы механиктарҙан — Кәримов, Дунюшкин, Сөйәмбәков, агрономдарҙан — Биктәшев, Ҡадеев, Минһажев иптәштәр был эште яҡшы ойоштороалар.

МТС механизаторҙары араһында ярышта иптәш Вахитов етәкселек иткән трактор бригадаһы алдынғы сафта бара. Был бригадала трактористар һәр бер сменаға 150—160 гектар ер тырматалар. Трактористар Фәткуллин һәм Хәжиев [illegible]

[illegible] ...ротехник срокта, 2-3 көн эсендә, юғары сифатлы итеп башҡарылды. 150 гектар ер культивацияланды, 200 гектар майҙанда бойҙай һәм борсаҡ сәселде. Трактористарҙан Маматов, Ахунов һәм Әюпов иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр.

Л. Баязитов.

Башкорт АССР-ы колхоздарында һабан ашлык культураларын сәсеү, ағас ултыртыу, ужымдарҙы тырматыу һәм мал азығы культураларын сәсеү барышы

(Үтәлеше 1951 йылдың 25 апреленә, процентторҙа)

Районлар	Һабан ашлык культураларын сәселгән	Ағас ултыртылған	Ужым тырматылған	Мал азығы культуралары сәселгән	Районлар	Һабан ашлык культураларын сәселгән	Ағас ултыртылған	Ужым тырматылған	Мал азығы культуралары сәселгән
Йомағужа	56,8	60	42	60	Пылайыр	20,4	—	18	—
Хәйбулла	54,8	49	69	45	Федоровка	19,4	17	—	0,2
Маҡар	50,1	—	62	23	Салауат	19,2	—	22	—
Стәрлетамаҡ	47,8	36	10	20	Архангель	18,7	—	39	21
Зиянчура	43,3	55	87	30	Покровка	18,4	—	17	7
Күгәрсен	40,1	50	80	13	Янаул	18,3	17	28	24
Әбйәлил	39,7	40	74	33	Белоҡатай	18,1	—	10	6
Туймазы	36,4	71	86	36	Дүртөйлө	17,7	46	38	4
Матрай	35,5	30	70	1	Бишбүләк	16,4	28	0,5	12
Ҡандра	33,8	53	69	18	Аскын	16,3	—	36	19
Воскресен	32,1	—	36	19	Благовар	15,8	25	8	14
Бүздәк	31,7	56	45	30	Йәрмәкәй	15,3	48	18	10
Балтас	31,2	24	19	4	Тәтешле	15	—	21	29
Ғафури	31,2	18	20	8	Благовещен	14,9	31	24	12
Стәрлебаш	31	28	37	7	Саҡмағош	14,9	60	5	5
Мәләүез	30,7	34	30	31	Бөрө	12,9	15	21	—
Баймаҡ	30	—	42	—	Байкыбаш	12,7	—	22	17
Учалы	29,3	—	62	—	Иглин	11,2	—	25	13
Көйөргәҙе	28,7	33	43	7	Ҡариҙел	10,6	—	—	24
Әлшәй	28,5	22	91	16	Белорет	9,8	—	9	—
Ауырғазы	27,8	26	35	20	Өфө	8,6	29	57	4
Шаран	26,9	55	51	19	Дыуан	8,1	—	13	—
Миәкә	26,3	33	27	11	Борай	7,3	32	35	2
Дәүләкән	24,8	20	44	56	Ҡалтасы	7	24	38	13
Шишмә	24,3	31	24	28	Краснокам	5,9	11	19	0,4
Бозаяз	23,9	47	29	11	Нуриман	5,6	—	8	5
Ҡырмыҫҡалы	23,7	29	40	20	Мәсетле	4,9	—	37	—
Мишкә	22	30	11	5	Баҡалы	4,4	38	21	5
Илеш	21,3	46	25	0,8	Кушнаренко	3,3	20	48	0,5
Абзан	21,1	40	28	2	Бәләбәй	1,8	15	23	2,3
Ҡыйғы	20,7	—	31	5	Бөрйән	—	—	23	—
Озо Тәләк	20,5	—	8	36	Октябрьский	10	—	—	—

Смена нормалары үтәлмәй

Сибай МТС-ы коллективы тракторҙар паркын яҙғы баҫыу эштәренә әҙерләүҙе тәьмин итмәне. Тракторҙарҙа ремонт яҙ килеп еткәс кенә, ашыҡ-бошоҡ үткәрелде, шуңлыҡтан ремонттың сифаты түбән булды. Хәҙер, яҙғы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк тракторҙар паркының яртыһынан күберәге эшләмәй тора.

Иптәш Ҡуналкулов етәкселек иткән трактор бригадаһының тракторҙары Буйбыш исемендәге колхозды хеҙмәтләндерә. Бригаданың «С — 80» тракторы ремонттан һуңлап сыҡты. Ул сиктән тыш насар ремонтланған. Трактор МТС-тан сығып 7 километр ер үткәс тә ватылды. Юлда тағы ла ремонт үткәрелде. Шулай итеп, был трактор тик 7-се көндө генә баҫыуға килеп етте. Ләкин юнләп эшләй алманы. 4 сәғәт самаһы эшләгәс тағы ла ватылды. Һәҙергәлә ул 30 сәғәт простой яһаны.

Трактористар араһында хеҙмәт дөрөҫ ойошторолмаған, смена нормалары үтәлмәй. Тракторист Закир Ишбаев, Сәлим Шәрәфетдинов иптәштәр смена нормаһын ни бары 50 — 55 процентка ғына үтәйҙәр. Тракторҙар яҡтылыҡ менән тәьмин ителмәгән. 53-сө, 54-се номерлы тракторҙарҙың фаралары ла юҡ. Ошондай сәрьез етешһеҙлектәр арҡаһында был бригадағы 6 трактор 7 көн эш ваҡытында бары 60 гектар ғына ер һөрҙө. Эштең сифаты ла бик түбән. 12—15 сантиметр тәрәнлектә генә һөрелә. Агротехник талаптар үтәлмәйҙәр.

Сталин исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе бригаданың тракторҙары ла тулы смена эшләмәйҙәр. Иптәш Закир Киекбаев бригадаһындағы 61-се, 64-се номерлы «СТЗ — НАТИ» тракторҙары баҫыуҙа ватылып ултыралар. Шулай уҡ трактор һабандары юҡлыҡтан ике НАТИ тракторы эшләмәй тора.

Сибай МТС-ының «Урғаза», «Яңы тормош», «Тейәләҫ», Ворошилов исемендәге колхоздарҙағы тракторҙары ла тулы ҡеүәтендә эшләмәйҙәр.

Ләкин МТС етәкселәре был түҙеп торғоһоҙ етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн ашыҡмайҙар. МТС директоры иптәш Витушкин трактор бригадаларының эше менән етерлек тиклем ҡыҙыҡһынмай, өлкән механик Исхаков, шулай уҡ участка механиктәре трактористарға тейешле ярҙам күрһәтмәйҙәр.

Дөрөҫ, МТС-тың яҡшы эшләүсе механизаторҙары ла бар. Миҫалға иптәш Юлыев бригадаһын алырға мөмкин.

Иптәш Нурмөхәмәт Юлыев етәкселек иткән өсөнсө номерлы трактор бригадаһының члендәре баҫыуҙа эш башлауҙың тәүге көндәрендә үк смена заданиеһен тулыһынса үтәнеләр. Ә 2-се, 3-сө көндә инде хеҙмәт етештереүсәнлеге тағы ла юғарыраҡ күтәрелде. Иптәш Миңғәли Хәмитов та «С — 80» тракторында көндәлек заданиеһен 120 — 130 процентка үтәй.

И. Зарипов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

ЯҘҒЫ СӘСЕҮҘӘ БӨТӘ РЕЗЕРВТӘРҘЕ ХӘРӘКӘТКӘ КИЛТЕРЕРГӘ

Большевиктар партияһының һәм хөкүмәттең арымай-талмай хәстәрлек күреүе арҡаһында республикабыҙҙың ауыл хужалығы беренсе класлы техника менән ҡоралландырылды. Республикабыҙҙа хәҙер 140 МТС, 4 ЛЗС һәм бер ЛМС бар.

МТС-тарҙа бай техниканы юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланған шарттарҙа ғына колхоздар бөтә эштәрҙе үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп башҡара аласаҡтар. Ләкин беҙҙең МТС-тарыбыҙ һәм совхоздарыбыҙ резервтарҙы файҙаланып еткермәйҙәр әле. 1950 йылда шартлы һәр бер трактор менән МТС-тарҙа 424 гектар, бөртөклө ашлыҡ совхоздарында 273 һәм малсылыҡ совхоздарында 401 гектар ер эшкәртелде.

Быйыл МТС-тарҙың тракторҙар паркын юғары етештереүсәнлекле файҙаланыу өсөн ҙур мөмкинлектәр тыуҙырылды. Ләкин ҡайһы бер урындарҙа тракторҙарҙы файҙаланыуҙағы етешһеҙлектәргә быйыл да юл ҡуйыла. Стәрлетамаҡ МТС-ының Усов етәкселек иткән бригадаһында 3 сәскес, 4 культиватор эшкә әҙер түгел. Усолы МТС-ы хеҙмәтләндергән Буденный исемендәге колхозда С—80 тракторы, яғыулыҡ аппаратураһының төҙөк булмауы арҡаһында, 4 көн эшләмәй ултырҙы.

Тракторҙарҙың насар файҙаланылыуының төп сәбәбе агрегаттарҙың насар ойоштороолоуында, простойҙарға юл ҡуйылыуында, техник тәрбиәнең һаҡланмауында һәм трактор бригадаһын хеҙмәтләндереүсе колхозсылар хеҙмәтенең насар ойоштороолоуында. Күпселек трактористтар смена заданиеларын үтәмәйҙәр һәм төндә эшләмәйҙәр. Тракторҙарҙың эшләмәй тороуҙарына артабан юл ҡуйырға ярамай. Был, резервтарҙы тулыһынса файҙаланырға өҫтәмә рәүештә миллиондарса гектар ер һөрөргә һәм сәсергә мөмкинлек бирер.

Тракторҙың эшен сәғәт графигы буйынса ойоштороу, уларҙы файҙаланыуҙа алдынғы метод булып тора. Был метод бөтә МТС-тарға ла индерелергә тейеш. Сәғәт графигы буйынса эшләү трактор бригадаһында хеҙмәт ойоштороолоуын яҡшырта, бригадирҙың етәкселек итеү кимәлен күтәрә, нормаларҙы арттырып үтәүгә мөмкинлек бирә. Трактористтарҙың сәғәт графигы буйынса эшләүҙәрен тәьмин итеү өсөн колхоздар уларҙы хеҙмәтләндереүгә сәрьез иғтибар бирергә тейештәр. Бригадаларға тәжрибәле колхозсыларҙы беркетергә, уларҙың даими булыуҙарына өлгәшергә кәрәк.

Әрелетелгән колхоздар быйыл яҙғы сәсеүҙе беренсе тапҡыр үткәрәләр. Шуға күрә урындарҙағы партия, совет ойошмалары, ауыл хужалығы органдары яҙғы сәсеүҙә производствоны ойоштороуҙа әрелетелгән колхоздарҙың правлениеларына һәр яҡлап ярҙам итергә тейештәр.

Былтыр күп кенә колхоздар үҙҙәрендәге хеҙмәт резервтарын тулыһынса файҙаланып еткермәнеләр. Мәҫәлән, Хәйбулла районы колхоздарында былтыр һәр колхозсы йыл буйына уртаса 328 хеҙмәт көнө, Дыуан районында 325, Дәүләкән районында 304 хеҙмәт көнө эшләһә, ә Көйөргәҙе районында һәр бер колхозсы ни бары 202, Әлшәй районында 198, Ғафури районы колхоздарында 196 хеҙмәт көнө генә эшләнде. Был факттар республикабыҙ колхоздарында хеҙмәт резервтарының ҙур өлөшөнөң файҙаланылмай ятыуы тураһында һөйләй.

Хеҙмәт резервтарын бөтә йыл әйләнәһенә тигеҙ файҙаланыу өсөн производство бригадаларын нығытырға кәрәк. Бөтә колхозсыларҙың да колхоз производствоһында эшкә ылыҡтырылыуы, хеҙмәткә яраҡлы һәр бер колхозсының колхоз производствоһында актив ҡатнашыуы, нормаларҙы үтәүе һәм арттырып үтәүе тәьмин ителергә тейеш.

Трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларының ныҡ бәйләнештә эшләүҙәре хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күп кенә колхоздарҙа был мәсьәләгә тейешле иғтибар ителмәй. Һәҙергәлә колхоздың йәнле тартыу көстәре эшкә насар ылыҡтырыла. Әбйәлил районы, Сталин исемендәге колхозда, яҙғы баҫыу эштәренең оҙаҡҡа һуҙылыуына ҡарамаҫтан, 30 эш үгеҙе баҫыу эштәрендә бөтөнләй файҙаланылмай. Был, йәнле тартыу көстәрен баһалап еткермәүҙән һәм баҫыусылыҡ бригадаларының трактор бригадаларының тығыҙ бәйләнештә эшләмәүҙәренең һөҙөмтәһе булып тора.

Яҙғы баҫыу эштәрендә иң мөһиме — сифат. Ләкин ҡайһы бер МТС-тарҙа быға иғтибар ителмәй. Михайловка МТС-ының трактор бригадаһы Стәрлетамаҡ районының «Красное знамя» колхозында 30 гектар майҙанды насар итеп культивациялаған һәм орлоҡто насар күмдереп сәскән. Маҡар районы Ворошилов исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән трактор бригадаһының трактористтары ерҙе предплужникһеҙ һабандар менән һөргәндәр.

Яҙғы баҫыу эштәрендә бындай етешһеҙлектәргә юл ҡуйырға ярамай. Колхоз һәм МТС араһында төҙөлгән договорҙың һәр ике яҡтан да үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк.

Фән ҡаҙаныштарын һәм алдынғы тәжрибәләрҙе колхоз производствоһына индереү мөһим урын тота. Был эш быйыл государство планы тәртибендә алып барыла. Яҙғы сәсеү осоронда колхоздар һәм совхоздар сәсеүҙә туфраҡты катоклау, орлоҡтарҙы яровизациялаштырып, һауала йылытып, арҡыры-буй һәм тар рәтле ысулда, сортлы орлоҡтар сәсеү, һөрәнте ҡатламын тәрәнәйтеү, гранул ашламалар индереү, люцернаны йәй сәсеү һәм башҡаларҙы киң ҡулланырға тейештәр.

Ауыл хужалығы эштәре буйынса 1951 йылға билдәләнгән государство планы нигеҙендә республика колхоздары 150 мең гектар майҙанда пар, 50 мең гектар майҙанда ужым, күп йыллыҡ үлән һәм яҙғы ашлыҡтар ашландырылырға тейеш. Государство планы буйынса минераль ашламаларҙы ҡулланыу 4 тапҡыр артасаҡ. Был сараларҙы тулыһынса ҡулланыу урожайҙы күтәреүгә ярҙам итәсәк.

И. Кудаяров,
ВКП(б) Өлкә Комитетының ауыл хужалығы бүлеге мөдире урынбаҫары.

„Кызыл Башкортостан“ материалдары буйынса

„Связь бүлегенең эшен баһаламайҙар“

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 30 март номерында Байназар связь бүлегенең (Бөрйән районы) эшенә район ойошмалары тарафынан тейешле иғтибар бирелмәүе тураһында хәбәр баҫылғайны.

Бөрйән районы Советының редакцияға хәбәр итеүенсә, был хәбәр баҫылып сыҡҡас, исполком ултырышында связдең Бөрйән район бүлеге начальнигы иптәш Ишбаевтың отчет докладын тыңланған. Район Советы исполкомы ултырышы Байназар связь бүлегенең эшен яҡшыртыуға һәм газета-журналдарҙы подписчиктарға үҙ ваҡытында еткереүҙе тәьмин итеүгә ҡарата практик саралар билдәләгән.

УРМАН ҺӘМ БАҠСА УЛТЫРТЫУ УН КӨНЛӨГӨ

Тәбиғәтте үҙгәртеүҙең сталинсе планын үтәү юлында

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу тураһында сталинсе план матбуғатта иғлан ителеү менән беҙҙең колхозда баҫыу һаҡлаусы урман полосаларына ағас ултыртыу, уларҙы тәрбиәләп үҫтереү буйынса махсус бригада ойошторолғайны. Был бригада членары беренсе йылда уҡ 7 гектар майҙанда ағас ултырттылар. Полосаға ултыртылған ағастар 97 процентҡа үҫешләнделәр. 1947 йылда ултыртылған ағастар хәҙер инде 1,5—2 метрға етә.

Урман полосаһы яҡшы тоҡомло ағастарҙан ғына торорға тейеш. Беҙ быға ныҡ иғтибар итәбеҙ. Беҙҙең урман полосаларында үҫтерелгән ағастарҙың күпселек өлөшөн имән, ҡайын тәшкил итә. Имәнде академик Лысенко методы буйынса ояләп ултыртабыҙ. Был метод менән 1949 йылда ултыртылған имән ағастары 30 — 40 сантиметрға, ә 1950 йылда ултыртылғандары 10 — 15 сантиметрға еттеләр.

1950 йылдың көҙендә өс ваҡ колхоз бер эре ауыл хужалығы артеленә берләште. Беҙҙең колхоз хәҙер районыбыҙҙағы иң ҙур колхоздарҙан иҫәпләнә. Ауыл хужалығының башҡа тармаҡтарындағы эштең күләме артҡан кеүек, баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу буйынса ла эштең күләме байтаҡ артты. Быйыл беҙ, үткән йылғыға ҡарағанда, ике тапҡырға артығыраҡ майҙанда ағас ултыртабыҙ. Был эштәрҙе үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлектәр бар. 4 центнерға яҡын имән орлоғо йыйналды, 12 мең төп тополь һәм 8 мең төп ҡайын ағастары әҙерләнде. Бынан тыш, 2 гектар майҙандағы питомникта күп һанда имән, ҡайын, ҡарағай, акация һәм башҡа ағас рассадалары бар. Быйыл питомникте тағы ла ҙурайтабыҙ.

Быйыл ағас ултыртылырға тейешле майҙандар көҙҙән һөрөлөп ҡалдырылғайны, унда дым һаҡлау маҡсатында иртә яҙҙан тырматыу үткәрҙек. Элек ултыртылған полосалардағы ағастарҙың тәптәрен йомшарттыҡ, полосаларҙы сүп-сарҙан таҙарттыҡ.

Беҙҙең бригада членары баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын өлгөлө тәрбиәләү өсөн тырышып эшләйҙәр.

Л. Дәүләтшин,

Балтач районы «Правда» колхозының баҫыу һаҡлаусы урман по[...]салары үҫтереү бригадаһы бригадиры.

Государство әһәмиәтендәге мөһим эш

Республикабыҙҙа промышленность предприятиелары һәм йөк ташыу көндән-көн үҫә бара. Уның бындай тиҙлек менән үҫеүе автотранспорттың тәүлек әйләнәһендә, бигерәк тә ҡышҡы шарттарҙа, өҙлөкһеҙ эшләүен талап итә. ВКП(б) Өлкә Комитеты һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы республикабыҙҙың көньяҡ райондарындағы Өфө — Чкалов трактының Өфө — Ермолаевка өлөшөндә ҡыш көндәрендә юлды ҡарҙан һаҡлау өсөн ағас ултыртырға ҡарар итте. Ҡарарҙа күрһәтелгәнсә, государство әһәмиәтендәге был мөһим эш яҙ 7—10 көн эсендә башҡарылырға тейеш. Бындай ҙур эште, әлбиттә, юл работниктары һәм тракт янында йәшәгән колхозсылар көсө менән генә башҡарып булмаясаҡ. Шуның өсөн был эшкә, хужалыҡ һәм транспорт ойошмалары йәлеп ителәсәктәр. Өфө ҡалаһындағы 56 хужалыҡ ойошмаһы 28 мең төп ағас, Өфө районы колхозсылар көсө менән 4 мең төп, Бөҙәйәҙ районы 11 мең 600 төп, Ауырғазы районы колхозсылары 10 мең төп ағас ултыртырға тейештәр. Был эштә республикабыҙҙың башҡа райондары һәм ҡалаларҙағы хужалыҡ ойошмалары ла ҡатнашасаҡтар.

Ағас ултыртыу эшендә уңыш — эшкә ҙур әҙерлек менән килеү, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, урман хужалығы һәм юл работниктары көсөн дөрөҫ бүлеүгә ныҡ бәйләнгән. Шуның өсөн был райондарҙың етәксе работниктарынан юл буйына ағас ултыртыу эшенә эшсе көсөн ныҡлы әҙерлек менән килтереү, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу талап ителә. Ағас ултыртыуҙы государство әһәмиәтендәге мөһим сара итеп ҡарарға кәрәк.

И. Кузнецов,

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге Юл управлениеһы начальнигы.

Эш уңышлы бара

Әлшәй районы Сталин исемендәге колхозда баҫыу эштәрен башлауҙың тәүге көндәрендә үк 125 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды, 100 гектар майҙанда һөрөлгән ер тырматылды, 109 гектар ер көнбағыш һабаҡтарынан таҙартылды.

Колхозда ағас ултыртыу эше яҡшы ойошторолдо. Был эштә Ғәйнәмаҡ ете йыллыҡ мәктәбе уҡыусылары һәм Олег Кошевой исемендәге дружина пионерҙары актив ярҙам күрһәтә. Улар көсө менән 12 мең төп ағас үҫентеләре әҙерләнде.

Правда исемендәге колхозда 300 гектар ужым суперфосфат һәм көл менән аҙыҡландырылды, 110 гектар ер һөрөлдө. Был колхозда Аксен МТС-ының иптәш Хәбибуллин етәкселек иткән трактор бригадаһы эшләй. Тракторсылар күп йыллыҡ үлән сиҙәмен һөрөүҙә ярышып эшләйҙәр.

М. Нагаев.

Егерме һигеҙ мең төп ағас ултыртылды

Ауырғазы районы Маленков исемендәге колхозда быйыл 10 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ултыртылырға тейеш. Был эштә 3 звено эшләй. Иптәш Хәбибрахман Усманов етәкселек иткән звено инде 28540 төп ағас ултыртты. Колхозда ошо көнгәсә ултыртылған йәш ағастар һаны 55 меңгә тиклем дә артты инде.

Ф. Богданов.

Өфө мәктәптәре экзамендарға әҙерләнәләр

Уҡыу йылының һуңғы, йомғаҡлау сирегә килеп етте. Тиҙҙән экзамендар.

Һынауҙарҙы һәм экзамендарҙы үткәреү государство әһәмиәтендәге эш. Уның уңышлы итеп уҙғарылыуы уҡыусыларҙың һәм уҡытыусыларҙың әҙерлектәренә бәйләнгән. Өфө ҡала мәғариф бүлеге мәктәптәрҙә экзамендарға әҙерләү буйынса күп кенә саралар үткәрҙе. Мәҫәлән, ошо йылдың март айында мәктәп директорҙары һәм мөдирҙәре өсөн семинар уҙғарылды. Унда экзамендарға һәм һынауҙарға әҙерлек мәсьәләһе ҡаралды. Шулай уҡ яҙғы каникул осоронда ҡаланың бөтә мәктәптәрендә лә уҡытыусылар кәңәшмәһе булып экзамендарға әҙерлек мәсьәләһе тикшерелде. Былардан башҡа тағы ла уҡытыусылар, уҡытыу бүлеге мөдирҙәре, директорҙар өсөн секцион занятиелар һәм семинарҙар уҙғарылды.

Ҡаланың күпселек мәктәптәре экзамендарға һәм һынауҙарға әҙерлек эштәрен дүртенсе сиректең тәүге көндәренән үк башлап ебәрҙеләр. Быға миҫал итеп 1, 3, 9, 12, 18, 28-се номерле, шулай уҡ 4, 8-се номерле эшсе йәштәр мәктәптәрен алырға мөмкин. Был мәктәптәр өсөнсө сиректә лә яҡшы һөҙөмтәләр бирҙеләр. Һәм улар уҡыу йылын юғары күрһәткестәр менән тамамлаясаҡтарына ышаныс белдерҙеләр.

Экзамендарға әҙерлек эштәре 18-се номерле мәктәптә айырыуса яҡшы ойошторолған һәм уҡыусыларға үтелгән дәрестәрҙе ҡабатлау өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған. Унда март айы башынан уҡ тын бүлмә ойошторолдо, һәм ул кәрәкле пособиелар, дәреслектәр менән тәьмин ителде. Был бүлмәлә һәр көн кис уҡыусылар уҡытыусыларҙың күҙәтеүе аҫтында дәрес әҙерләйҙәр. Дәрестәрҙән тыш бөтә фәндәр буйынса ла консультация биреү махсус расписание буйынса алып барыла.

Мәктәптә уҡыусылар һәм ата-әсәләр өсөн стенд ойошторолған. Унда көн режиме, айырым фәндәр буйынса үткән материалдарҙы нисек ҡабатларға, дәрескә нисек әҙерләнергә кәрәклеге һәм башҡалар тураһында кәңәштәр бирелгән. Был мәктәп менән ата-әсәләр араһында тығыҙ бәйләнеш урынлаштырылған. Күптән түгел экзамендарға әҙерлек мәсьәләһе буйынса йыйылыш булып үтте, ата-әсәләр менән айырым бәседәләр ойошторолдо һәм уларға экзамендар ваҡытында балаларҙы күҙәтеү бурысы тапшырылды.

Ләкин ҡайһы бер мәктәптәр ошондай ыңғай тәжрибәләрҙе үҙҙәренең практик эштәрендә ҡулланмайҙар. Был мәктәптәрҙең уҡытыусылары, уҡытыу бүлеге мөдирҙәре һәм директорҙары дәрестә өлгәшә алмаусылар менән эште һәм шулай уҡ экзамендарға әҙерлекте тейешенсә ойоштормағандар әле. Уҡытыу-тәрбиә эшенә ошондай ҡараш булыуы һөҙөмтәһендә, 11, 19, 45, 64-се номерле мәктәптәрҙә өлгәшмәүсе балалар һаны байтаҡ ҡына иҫәпләнә. Был мәктәптәрҙең уҡытыусылар коллективтары алдында йәшәп килгән кәмселектәрҙе бөтөрөү өсөн энергиялы саралар күреү бурысы тора.

Экзамендар башланыуға күп ваҡыт ҡалманы. Ошо ҡалған ваҡытты рациональ файҙаланыу, экзамендарға һәм һынауҙарға әҙерлек эшен өлгөлө ойоштороу, һис шикһеҙ, уҡыу йылын уңышлы тамамларға мөмкинлек бирәсәк.

Ғ. Фатихов,

Өфө ҡала мәғариф бүлеге мөдире.

Студенттарҙың ғилми конференцияһы

Ошо көндәрҙә Башҡорт педагогия институтында ғилми общество членарының конференцияһы булды. Общестоның һәр бер секцияһында бишәр доклад тыңланды. Бындай докладтарҙан: тарих фәне секцияһында иптәш Закировтың «Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарихы», Бикбулатовтың «Тыныслыҡ яҡлылары хәрәкәте», филология фәндәре бүлегендә иптәш Собелевтың «Һуғыштан һуңғы совет әҙәбиәтендә большевик образы» һәм Зариповтың «Рәшит Ниғмәти поэзияһының үҙенсәлектәре» тигән докладтары булды.

Иҗади һәм тикшеренеү характерындағы докладтар студенттар тарафынан ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңландылар.

И. Абдуллин.

ШИШМӘ РАЙОНЫНДА

Механизаторҙар ярышы

Район машина-трактор станцияларында Май алды социалистик ярышы киңдән-киң киңәйә бара. МТС коллективтары бөтәренке йөкләмәләр алалар.

Ново-Троицк МТС-ы механизаторҙары Өфө электр оборудованиелары заводы коллективының мөрәжәғәтен хуплап, уларҙың саҡырыуына бер күңелдән ҡушылдылар.

Улар, үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреп, мул урожай үҫтерергә йөкләмә алдылар.

Шишмә МТС-ының ете трактор бригадаһы колхоздарға ебәрелде. Улар үҙҙәре хеҙмәтләндерәсәк колхоздарҙа көҙҙән һөрөлөп ҡалдырылған ерҙәрҙә дымды һаҡлап ҡалыу өсөн тырматыу эштәре алып баралар.

Төҙөлөш бригадаһы

«Яңы тормош» колхозында 30 кешенән торған төҙөлөш бригадаһы ойошторолдо. Бригада менән балта оҫтаһы иптәш Хәмзин етәкселек итә.

Колхоздың производство планы нигеҙендә бригада 1951 йылда кирбес заводы, пожар депоһы, иген склады, мөгеҙле эре малдар өсөн торлаҡ, радиоузел һәм колхозсылар өсөн өйҙәр төҙөйәсәк.

Бөйөк төҙөлөштәр тураһында доклад

Күптән түгел Киров исемендәге колхозда «Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре» тигән темаға доклад үткәрелде. Докладты колхозсылар бик ҡыҙыҡһынып тыңланылар.

Илебеҙҙәге бындай төҙөлөштәрҙең уңышлы үтәлеүенә яуап итеп, колхозсылар яҙғы сәсеүҙе өлгөлө үткәрәсәктәрен белдерҙеләр.

Ф. Шәрәфетдинов.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенән белдереү

ПХЕНЬЯН, 25 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһы 25 апрелдә, бөтә фронттарҙа ла Халыҡ армияһының частары Ҡытай добровольцтарының отрядтары менән берлектә, интервенционистик ғәскәрҙәргә ҡаршы ҡаты һуғыш алып барыуҙы дауам иттерәләр, тип хәбәр итте.

24 апрелдәге һуғыштарҙа Халыҡ армияһының частары дошманға ђаз[...] тә һәм техникала байтаҡ [...] яһанылар: дошмандың 924 һалдат [...] офицеры пленға алынды; төрлө [...] 52 орудие, 97 автомашина, [...] ауыр һәм еңел пулемёттар, 1,0[...] товка һәм башҡа трофейҙар ҡулға [...] релде.

24 апрелдә дошмандың 2 са[...] атып төшөрөлдө.

Президент Беруттың Германия демократик республикаһынан китеүе

БЕРЛИН, 25 апрель. (ТАСС). Польша республикаһының президенты Болеслав Берут 24 апрелдә Германия демократик республикаһының төрлө урындарына барҙы.

Бөтә урындарҙа ла халыҡ президент Берутты рух күтәренкелеге менән ҡаршыланы.

Берлинға ҡайтҡас, президент Берут президент Вильгельм Пик һәм Германия демократик республикаһының хөкүмәте хөрмәтенә культура йортонда ҡабул итеү ойошторҙо.

Кис менән президент Берут Берлиндан китте. Көнсығыш вокзал янында митинг булды, унда Германия демократик республикаһының премьер-министры Отто Гротеволь визит яһаған өсөн президент Берутҡа рәхмәт белдерҙе һәм был визиттең ҙур политик әһәмиәткә эйә булыуы[...] һәтте.

Президент Берут үҙенә күрһәтел[...] шы ҡабул итеү өсөн Берлин ха[...] Германия демократик республика[...] гражданарына, шулай уҡ ты[...] өсөн көрәшеүселәрҙең бөтәһенә лә [...] әйтте һәм хеҙмәттә, тыныслыҡ һә[...] маһиәнып берҙәмлеге өсөн көрәштә [...] ҙа ҙур уңыштар теләне. Йыйнал[...] ларҙың И. В. Сталин, Берут һәм П[...] мәтен маҡтау белдереүҙәре аҫтын[...] зидент үҙ телмәрен түбәндәге һүҙ[...] нән тамамланы:

«Йәшәһен тыныслыҡ һәйәрә[...] кратик, берҙәм Германия! Йәшәһе[...] мания—Польша дуҫлығы! Йәшәһен [...] ния демократик республикаһының [...] денте Вильгельм Пик!».

Көнбайыш Германия халҡы ремилитаризациялауға ҡаршы сыға

БЕРЛИН, 24 апрель. (ТАСС). Бамберг ҡалаһында (Германияның *Америка оккупацион зонаһы*) Америка империалистарының яңы һуғыш әҙерләүгә йүнәлтелгән политикаһына Көнбайыш Германия халҡының мөнәсәбәтен характерлаусы инцидент булды.

Хәрби әҙерләнеүҙәр айҡанлы Американың *оккупацион властары* Көнбайыш Германия йылғалары аша ниндәй ҙә булһа әһәмиәте булған күперҙәрҙе минировать итәләр. Күптән түгел Бамберг ҡалаһының администрацияһы Американың хәрби властарынан Регниц йылғаһы аша күперҙәрҙең пландарын уларға тапшырыу тураһында бойороҡ алған.

Ләкин ремилитаризациялау һәм яңы һуғышҡа әҙерләнеү политикаһына [...] *сығыусы халыҡ баҫымы аҫтында* [...] магистраты *Америка властарына* [...] күрһәтелгән пландарҙы биреүҙән [...] тартҡан.

Был айҡанлы АҠШ-тың Германия[...] верховный комиссары генерал М[...] Бамбергтең обер-бургистры Гроштан [...] берг күперҙәренең пландарын 12 с[...] эсендә бирергә һәм *бирелмәгән* [...] *был пландарҙы көслөк юлы менән* [...] яһап, ультиматум талабы ебәргән.

Грош магистраттың яңы ҡарар[...] башҡа был талапты үтәүҙән баш т[...] ҡан, магистрат рәҙәттән тыш ултыры[...] саҡырыласаҡ.

Франция компартияһы секцияларының биналарына деголселарҙың бандиттарса һөжүме

ПАРИЖ, 25 апрель. (ТАСС). «Юманите» газетаһы, 24 апрелдә төндә РПФ фашистик яллаўсылары (деголселар) ҡул пулемёты, револьверҙар һәм таяҡтар менән ҡоралланып, Франция коммунистар партияһының Ницца ҡалаһындағы ике секцияһының биналарына һөжүм иттеләр, унда өс коммунисты сирьёз яраланылар, тип хәбәр итә. Яралаусыларҙың береһе — типография эшсеһе Баутен госпиталгә оҙатылған.

Деголселарҙың был әтһеҙ һөжүме [...] нән нәфрәтләнгән Ницца хеҙмәтсе[...] демонстрация ойошторғандар һәм прот[...] митингеһен уҙғарғандар, уларҙа РПФ-[...] ҡоралы группаларын таратыуҙы т[...] иткәндәр.

Деголселарҙың әтһеҙ провокация[...] на ҡаршы протест билдәһе итеп эш т[...] таткан күп һандағы предприятиеләр[...] хеҙмәтсәндәре тарафынан да ошондай [...] талаптар ҡуйылған.

БЕРУТТЫҢ ВАРШАВАҒА ҠАЙТЫУЫ

ВАРШАВА, 25 апрель. (ТАСС). *Германия демократик республикаһы президентына Вильгельм Пикка визит яһаған Польша республикаһы президенты Болеслав Бер[ут]* бөгөн Берлиндан Варшаваға ҡайтты.

Президент менән бергә уны оҙатып [...]ған кешеләр ҙә ҡайттылар.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

ЖИТНЯК ҮЛӘНЕНӘН ЮҒАРЫ ОРЛОҠ УРОЖАЙЫ ҮҪТЕРЕҮ АГРОТЕХНИКАҺЫ

Күп йыллыҡ үләндәр ҡушымтаһы араһында житняк үләне Башҡортостандың ҡорологораҡ яҙан райондарында мал аҙығы өсөн үҫтерелә торған төп үлән булып тора. Уның бесән урожайы, тәбиғи болондоҡтарҙыҡына сағыштырғанда, икеөс тапҡырға артыҡ була. Житняктең ҡеүәтле үҫешләнгән тамырҙары тупраҡтың физик үҙенсәлеген, уның структураһын яҡшырта. Шуға күрә житняк сиҙәменә сәселгән бөртөклө ашлыҡ культуралары юғары урожай бирәләр. Баҫыуҙа нормаль рәүештә үҫкән житняк үләндәре баҫыуҙы таҙарталар, ҡый үләндәрен бөтөрәләр.

Башҡа төр башаҡлы үләндәргә ҡарағанда, житняк яҙ көнө бик иртә үҫә башлай. Шуға күрә ул яҙғы иртә осорҙа үҙен аҙыҡ менән тәьмин итә.

Житняк — мал аҙығы өсөн үҫтерелә торған башаҡлы күп йыллыҡ үлән. Ул илебеҙҙең колхоз һәм совхоздарында ике төрлө ысулда — киң полосалы һәм тар полосалы итеп сәселә. Беҙҙең Башҡортостан колхоздарында һәм совхоздарында житняк, башлыса, киң полосалы ысулда сәселә.

Был ысулда сәсеү, тар полосалы житнякҡа ҡарағанда, ҡорологораҡ түҙемлерәк булып иҫәпләнә.

Тупраҡ нормаль рәүештә дымлы булғанда, житняк орлоғо сәселгәндән һуң 10 — 12 көндә шытып сыға. Әгәр тупраҡта дым аҙ булһа, орлоҡтар һирәк булып сығалар, йәки бөтөнләй шытмай ҡалалар. Яҙ ҡоро тупраҡҡа йәки һуңлап сәселгән житняктең насар шытыуы йәки шытмауы тик шуның менән генә аңлатыла.

Тәүге үҫеш осоронда житняктең тамыр системаһы һәм ер өҫтө ҡатламы тиҙ кибеүсән була. Ул был осорҙа сәселһә, уның тамыр өлөшө аҡрын үҫешләнә һәм йыш ҡына һәләк була. Йәки йәш үҫентеләр кәйеп һирәкләнә. Тәүге осорҙа бик аҡрын үҫеүе, үҫентеләренең наҙлы һәм нескә булыуы һөҙөмтәһендә, житнякте яҙ тупраҡтың ҡатыланыуы йонсота һәм һәләк итә. Житнякте көҙ көнө сәскәндә бындай күренештәр булмайҙар.

Башҡортостан Шишмә селекция станцияһы баҫыуҙары шарттарында житняктең яҙғы шытып сығыуынан алып өлгөрөүенә тиклем вегетация осоро 90—100 көн тәшкил итә. Ләкин был осорҙоң оҙаҡлығы йылдың һауа шарттарының нисек килеүе менән билдәләнә. Ҡорологло йылдарҙа уның үҫеп өлгөрөүе тиҙерәк була, Ә яуынлы йылдарҙа ул аҡрыныраҡ, 5 — 10 көнгә һуңыраҡ өлгөрә.

Агротехника талаптары үтәлгән шарттарҙа житняк юғары урожай бирә, һәр гектарҙан 4-5-әр центнер орлоҡ һәм 30 — 45-әр центнер бесән урожайы алына.

Тупраҡты эшкәртеү. Житняк сәсеү өсөн ҡыйҙарҙан таҙартылған ер бүленә. Тупраҡты эшкәртеү ҡамыл төптәрен йомшартыуҙан башлана, уның артынан тырматыла. Һәр һөрөү бик иртә, предплужникле һабан менән үткәрелә. Төп һөрөү ваҡытында ашлама индерелә. Һәр гектарға 15—20 тонна тиреҫ йәки 8—10 центнер ҡош тиҙәге, йәки 6-7 центнер көл, йәки 3 центнер суперфосфат, 1,5 центнер калий тоҙо ашламаһы ҡулланыла. Ашлама көҙҙән индерелмәһә, ул яҙ көнө тупраҡҡа индерелә. Иртә яҙҙа тупраҡ бер-ике әҙҙән тырматыла. Тунға һөрөлгән ерҙең тупрағы сәсеү алдынан 4-5 сантиметр тәрәнлектә культивациялана.

Житнякте йәйге-көҙгө срокта сәсеү өсөн тупраҡты эшкәртеү, ужым культураларын эшкәртеү кеүек үк була, йәғни пар ере булдырыла.

Сәсеү. Сәскес машинаһының сәскес аппараттарынан житняк орлоҡтары насар ҡойола. Һөҙөмтәлә сәселмәй ҡалған урындар булғылай. Тигеҙ сәсеүҙе тәьмин итеү маҡсатында, сәсеү ваҡытында йәшниктәге орлоҡтарҙы йыш болғатырға һәм тығылған тишектәрҙе таҙартырға кәрәк. Машинаның сәсеүсе аппараттары ныҡ күҙәтелергә тейеш. Был маҡсатта житняк сәсеүсе һәр бер сәскескә икешәр кеше беркетелә. Улар орлоҡтоң сәселеүен күҙәтергә һәм йәшниктәрҙе болғатырға тейештәр. Ошолай эшләгәндә, орлоҡтоң тигеҙ сәселеүен тәьмин итергә мөмкин.

Житнякте ҡаплаусы сифатында сәскәндә, тәүҙә ҡапланыусы культура орлоҡтары, ә уның артынан шул уҡ көндә уға арҡыры рәүештә житняк сәселә. Әгәр тупраҡ бик йомшаҡ булһа, сәсеү алдынан йәки сәскәндән һуң ул каток менән баҫтырыла. Орлоҡтар тигеҙ шытып сыҡһындар өсөн, уны һаҡланса көндәрҙә, дымлы тупраҡҡа сәсергә кәрәк.

Башҡортостан государство селекция станцияһында житнякте сәсеү сроктары буйынса үткәрелгән тәжрибәләр түбәндәгеләрҙе күрһәттеләр. Иртә яҙҙы һәр гектарға 15-әр килограмм орлоҡ нормаһы менән тотош теҙмә сәселгән житняк икенсе йыл үҫеүендә, 1949 йылда, иң юғары орлоҡ урожайы бирҙе.

Бесән өсөн житняк, ғәҙәттә, яҙғы бойҙайҙы ҡаплаусы итеп, тотош сәсеү ысулында, таҙа килеш йәки люцерна менән ҡатнаштырып сәселә. Житнякте йәки люцернаны үҙен генә айырым сәскәнгә ҡарағанда, житняк-люцерна ҡушымтаһы, һис шикһеҙ, юғары урожайлы булып тора.

Орлоҡ өсөн житнякте киң рәтле, ике таҫмалы ысулда сәсергә кәрәк. Шишмә селекция станцияһында 1947 йылда ул киң рәтле, ике таҫмалы ысулда сәселде. Таҫмалар араһы 60 сантиметр киңлектә, ә таҫмаларҙағы рәт араһы 13—15 сантиметр булды. 6 килограмм сәсеү нормаһы ҡулланылды. Был сәсеүлек ике йылда (1948—1949 йылдарҙа) һәр гектарҙан 11,76 центнер орлоҡ бирҙе. Ә 15 килограмм сәсеү нормаһын ҡулланып, рәт араһын 15 сантиметр киңлектә сәселгән участкала һәр гектарҙан ни бары 6,71 центнер орлоҡ урожайы алынды.

Республикабыҙ колхоздарында һәм совхоздарында сәсеү әйләнеше баҫыуҙарын үҙләштереүҙе һәм житняк үләне орлоҡтары менән тәьмин итеүҙе тиҙләтеү өсөн житнякте һәр гектарға 5-6 килограмм орлоҡ нормаһында, киң рәтле, ике юл таҫмалы ысулда сәсеү тәҡдим ителә. Бөртөклө ашлыҡ культуралары аҫтына ҡаплаусы сифатында сәскәндә, сәсеү нормаһын икеләтә арттырырға, йәғни һәр гектарға 12—15 килограмм нормаһында сәсергә мөмкин. Житнякте люцерна менән ҡушып сәсеү нормаһын икеһе өсөн дә һәр гектарға 8-әр килограмм итеп алырға тәҡдим ителә. Орлоҡ 3 сантиметрҙан да тәрәнгә күмелергә тейеш түгел. Орлоҡтар тиҙ шытып сыҡһындар өсөн сәсеүҙән һуң тупраҡты катоклау һәм уның артынан еңел тырма менән тырматыу тәҡдим ителә. Катоклау өсөн ағастан эшләнгән шыма каток файҙаланыла.

Орлоҡ өсөн житнякте ҡаплаусыһыҙ итеп, киң рәтле, ике юл таҫмалы ысулда сәскәндә, орлоҡтар шытҡандан һуң һәм араларындағы тупраҡты беренсе тапҡыр эшкәртеү мөмкин булһын өсөн, уға һоло ҡушып (һәр гектарға 2-3 килограмм иҫәбенән) сәсергә тәҡдим ителә. Бында һоло үҫемлеге маяҡ ролен үтәй һәм ул житняк үҫемлектәре рәттәрен айырып күрергә ярҙам итә.

Тәрбиәләү. Житняк сәсеүлегендә түбәндәге тәрбиәләү эштәре үткәреләләр. Маяҡ үҫемлектәр шытып сыҡҡан саҡта рәт аралары эшкәртелә. Рәт араларын эшкәртеү һәм утау эштәре бөтә йәй буйына кәм тигәндә 2-3 тапҡыр үткәрелә.

Икенсе йыл үҫеүсе сәсеүлектә яҙ үҫемлектәр үҫә башлау осоронда орлоҡсолоҡ участкаһы ат тырмаһы менән тырматыла һәм йыйналған сүп-сар шунда уҡ яндырыла. Ошо уҡ осорҙа үҫемлектәр өҫтәмә аҙыҡландырыла. Ашламаларҙан һәр гектарға 4-5 центнер ҡош тиҙәге, йәки 1,5-2 центнер суперфосфат һәм бер центнер калий тоҙо файҙаланыла. Рәт араларында тупраҡты икенсе тапҡыр эшкәртеү житняктең баш ебәреү осоронда үткәрелә.

Сәскә ата башлау осоронда өҫтәмә рәүештә, яһалма аталандырыла. Ул Мусинко методы буйынса, рәттәрҙең буйына һәм арҡырыһына, ике-өс көн үтеү менән 2-3 тапҡыр үткәрелә. Быны өсөн көндеҙге, ысыҡ киткән ваҡытты һайларға кәрәк. Өсөнсө йыл үҫеүендә житнякте тәрбиәләү саралары шул уҡ, икенсе йылдағы кеүек үк, була.

Х. Фәтхуллин,

Ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, Башҡортостан государство селекция станцияһының өлкән ғилми сотрудниги.

ОТОШТАР ТИРАЖЫ

1951 йыл 29 апрелдә Павлодар ҡалаһында СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең икенсе государство займы буйынса отоштарҙың етенсе тиражы буласаҡ.

Тиражда 100 миллион һумлыҡ заемдың бер разрядына 2.301.400 һумлыҡ дөйөм суммаға 8.825 отош уйналасаҡ, уларҙан:

50.000 һумлыҡ	1 отош
25.000 һумлыҡ	2 отош
10.000 һумлыҡ	5 отош
5.000 һумлыҡ	10 отош
1.000 һумлыҡ	100 отош
500 һумлыҡ	1000 отош
200 һумлыҡ	7.507 отош

Өфө ҡалаһында, Өфө фанера заводы[...] 2-се номерлы йорт, 22-се квартирала [...] роусы Хәйруллина Мәрйәм Хәйрулла [...]ҙы Өфө ҡалаһы Заозерный урамы 11-се номерлы йортта тороусы Ғәйнуллин Ғә[...] хәт Исмәғил улы менән айырылыш[...] тураһында эш ҡуҙғата. Эш Өфө ҡала[...]ның Жданов районы 3-сө участка х[...] судында ҡараласаҡ.

Өфө ҡалаһы Менделеев урамының 4[...] номерлы йортонда йәшәүсе гражда[...] **Гафинов** Юрий Дмитриевич Өфө ҡалаһын[...]да йәшәүсе гражданка **Дьяконова** Ана[...]сия Яковлевна менән айырылыш[...] тураһында эш ҡуҙғата. Эш Өфө ҡала[...] Жданов районының 3-сө участка ха[...] судында ҡараласаҡ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Ҡарл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2 83 87, секретариат — 2 78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2 80 49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02455. Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тираж 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

32-се йыл сыға.

1951 йыл
№ 83 (8800)
28
апрель
шәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин

Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре! Фән өлгәшеүҙәрен һәм алдынғы тәжрибәне производствоға ҡыйыуыраҡ индерегеҙ! Техникаға тулыһынса эйә булығыҙ! Промышленностә, транспортта, төҙөлөштә, ауыл хужалығында машиналарҙы һәм оборудованиеларҙы тулыһынса файҙаланыуға өлгәшегеҙ!

(ВКП(б) Үҙәк Комитете саҡырыуҙарынан).

БӨЙӨК ЛЕНИН—СТАЛИН ПАРТИЯҺЫНЫҢ САҠЫРЫУҘАРЫ

[illegible] ВКП(б) Үҙәк Комитетенең 1951 йылдың 1 Майына ҡарата саҡырыуҙары [illegible] итеҙе. Бөйөк Ленин — Сталин партияһының саҡырыуҙарын бөтә совет [illegible] ғәйәт ҙур рух күтәренкелеге менән ҡаршыланы. Беҙҙең партиябыҙҙың [illegible] алғы саҡырыуҙарында коммунизмде [illegible] төҙөүсе, бөтә донъялағы тыныслыҡ терәге — үҙенең социалистик [illegible] илевен ҡеүәтен нығытыусы [illegible] совет халҡының интерестәре көйләнгән. Уларҙа бөтә ер шарының [illegible] һәм халыҡтар именселеге [illegible] бөйөк эшен яҡлау менән ҡыҙыҡһын[illegible] кешеләренең ихтыяры һәм ын[illegible] көйләндерелгән.

[illegible] бөтә азатлыҡ һөйөүсе халыҡтар [illegible] рәүештә традицион байрам [illegible] — хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара со[illegible] көнөн, бөтә илдәр эшселәренең [illegible] көнөн әҙерләнәләр.

Беренсе Май байрамы алдынан хеҙ[illegible], бөтә прогрессив кешелектең [illegible] һәм уйҙары беҙҙең Тыуған илебеҙ[illegible] — тыныслыҡ, демократия һәм со[illegible] өсөн көрәштең ҡеүәтле лагере[illegible] барыусы еңгән социа[illegible] юнәлдерелгән. Беҙҙең партия[illegible] 1 Майға ҡарата ҡотлау һүҙҙәре [illegible] илдәргә етәсәк һәм масса[illegible] тарафынан ҡабул ителәсәк:

— Тыныслыҡ өсөн, демократия өсөн, [illegible] өсөн көрәшеүсе бөтә халыҡтарға [illegible] сәләм!

Беренсе Май — халыҡтар азатлығы һәм [illegible] өсөн, яңы тормош төҙөү [illegible] көрәшкә көстәрҙе смотр һәм уларҙы мобилизовать итеү көнө. Демократия һәм социализм өсөн көрәшеүсе[illegible] көстәре йыл һайын үҫә, уларҙың [illegible] арта. Ленин — Сталин партияһы [illegible] бөтә совет халҡы халыҡ демократияһы [illegible] хеҙмәтсәндәрен ҡайнар ҡотлай:

— Үҙ илдәренең экономикаһын һәм [illegible] күтәреү юлы менән, социа[illegible] төҙөү юлы менән ышаныслы барыу[illegible] халыҡ демократияһы илдәре хеҙмәт[illegible] туғандарса сәләм!

— Йәшәһен үҙ иленә азатлыҡ һәм [illegible] яулап алған һәм яңы [illegible] уңышлы ижад итеүсе бөйөк [illegible] халҡы!

Совет халҡы менән Ҡытай халыҡтары[illegible] ҡаҡшамаҫ дуҫлығы һәм хеҙмәт[illegible] йәшәһен һәм нығыһын!

Совет кешеләре һәм бөтә илдәрҙең [illegible] Корея халҡының үҙенең [illegible] һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн [illegible] батырҙарса көрәшеү ғәйәт ҙур [illegible] һәм тулҡынһыҙ хеҙмәттәшлек [illegible] күрәтә. Беренсе Май көндәрендә [illegible] илебеҙ халыҡтары түбәндәгеләрҙе [illegible] итәләр:

— Сит ил баҫҡынсыларының ҡорал[illegible] интервенцияһына ҡаршы, үҙ Тыуған [illegible] азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо [illegible] геройҙарса көрәшеүсе азатлыҡ һө[illegible] Корея халҡына туғандарса сәләм!

Тыныслыҡты яҡлау — донъялағы бөтә [illegible] эше. Империалистик һуғыш [illegible] әҙләнеүҙәренә ҡар[illegible] көрәшкә Европала һәм Азияла, Африкала, Австралияла һәм Америкала [illegible] киңерәк халыҡ массалары күтә[illegible]. Беренсе Май көндәрендә халыҡтар [illegible] халҡының тормош интерестәре [illegible], берҙәм, бойондороҡһоҙ, демократик, [illegible] һөйөүсе Германия өсөн көрә[illegible] Германияның демократик көстәрен [illegible]. Улар Югославиялағы фашис[illegible] режимға ҡаршы, үҙ Тыуған иленең [illegible] бойондороҡһоҙ булыуы [illegible] азатлыҡ көрәшен алып барыусы [illegible] данлы патриоттарын ҡот[illegible]. Улар үҙҙәренең азатлығы һәм [illegible] бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшеүсе [illegible] һәм бойондороҡло илдәрҙең [illegible] туғандарса сәләм ебәрәләр. [illegible] халҡы: Йәшәһен бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәштә Англия, Америка [illegible] Штаттары һәм Советтәр Союзы [illegible] дуҫлығы! тип иғлан итә[illegible].

Тыныслыҡ өсөн халыҡтарҙың ойошҡан [illegible] яңы баҫҡысҡа күтәрелде. Үткән [illegible] Стокгольм Воззваниеһына ҡултам[illegible] йыйыу буйынса кампания ҙур [illegible] менән үтте. Биш йөҙ миллиондан [illegible] кеше тыныслыҡ [illegible] һаҡлап алып ҡалырға, империа[illegible] һуғыш тоҡандырыусыларҙың [illegible] уйҙарын әҙергә ҡарар итеүсе [illegible], был Воззваниеға үҙенең ҡул[illegible] ҡуйҙы. Хәҙер биш бөйөк дер[illegible] араһында Тыныслыҡ Пакты өсөн [illegible] әлләнә-әле үҫә бара. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең 1 Майға ҡарата саҡырыуҙары йөҙәр миллионлаған кеше[illegible] йөрәктәрендә йәшә отклик таба[illegible].

— Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре! Әгәр ҙә халыҡтар тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу эшен үҙ ҡулдарына алһалар һәм уны аҙағына тиклем яҡлаһалар тыныслыҡ һаҡлап алып ҡалыныр һәм нығытылыр! Тыныслыҡты яҡлаусыларҙың ҡеүәтле фронтын киңәйтегеҙ һәм нығытығыҙ!

— Бөтә донъяла тыныслыҡты яҡлаусылар! Америка, Англия, Франция һәм башҡа миллионерҙарҙың һәм миллиардерҙарҙың енәйәтсел хәрби агрессия пландарын фаш итегеҙ һәм өҙөгөҙ! Һуғыш тоҡандырыусыларға халыҡ массаларын ялғанлыҡ менән солғап алырға, уларҙы алдарға һәм яңы бөтә донъя һуғышына ылыҡтырырға юл ҡуймағыҙ!

Беҙҙең Тыуған илебеҙ — Совет Социалистик республикалар Союзы — һуғышты булдырмау һәм тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу политикаһын эҙмә-эҙлекле итеп үткәрә. Советтәр Союзының тышҡы политикаһы, тыныслыҡ һәм именселек политикаһы, халыҡтарҙың тиң хоҡуҡлылығы һәм дуҫлығы политикаһы бөтә тыныслыҡ һөйөүсе халыҡтарҙың хөрмәтен һәм яҡлауын яуланы. Беҙҙең халҡыбыҙҙың тыныс ижади хеҙмәтен Советтәр Союзының данлы Ҡоралды Көстәре һаҡлайҙар.

— Тыуған илебеҙҙең тыныслығын һәм именселеген һаҡлаусы Совет Армияһына һәм Хәрби-Диңгеҙ флотына дан!

Совет халҡы Беренсе Май байрамын тыныс төҙөлөш фронтында тарихи еңеүҙәр менән ҡаршылай. Һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡты тулыһынса һәм арттырып, уңышлы үтәү тураһындағы белдереүҙе совет кешеләре үҙҙәренең бөйөк Тыуған илдәре өсөн патриотик ғорурлыҡ тойғоһо менән ҡаршыланылар. Биш йыллыҡ план заданиеларын тулыһынса һәм арттырып үтәп, беҙҙең илебеҙ большевиктар партияһы етәкселегендә, бөйөк Сталин юлбашсылығында коммунизмға табан юлда яңы ҙур аҙым яһаны. Хәҙер совет халҡы 1951 йылғы планды срогынан алда үтәү өсөн, коммунистик төҙөлөштә яңы уңыштар өсөн ярыш йәйелдерә. Коммунизмдың бөйөк төҙөлөштәрен ҡороуға хеҙмәтсәндәр ҙур рух күтәренкелеге менән башланылар.

— Советтәр Союзының эшселәре, крәҫтиәндәре, интеллигенцияһы! 1951 йылғы халыҡ хужалығы планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ! Тыныс хеҙмәттә яңы подвигтар менән беҙҙең социалистик Ватаныбыҙҙың ҡеүәтен нығытығыҙ!

— Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре! Волгала һәм Днепрҙа, Донда һәм Аму-Дарьяла бөйөк төҙөлөштәрҙе уңышлы тормошҡа ашырып, коммунизм төҙөү эшенә яңы өлөш индерәйек!

ВКП(б) Үҙәк Комитеты үҙенең Беренсе Майға ҡарата саҡырыуҙарында, беҙҙең социалистик экономикабыҙҙы артабан күтәреү өсөн көрәштә конкрет бурыстарҙы билдәләп, халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарының работниктәренә мөрәжәғәт итә. Партия былай тип саҡыра:

— Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре! Фән өлгәшеүҙәрен һәм алдынғы тәжрибәне производствоға ҡыйыуыраҡ индерегеҙ! Техникаға тулыһынса эйә булығыҙ! Промышленностә, транспортта, төҙөлөштә, ауыл хужалығында машиналарҙы һәм оборудованиеларҙы тулыһынса файҙаланыуға өлгәшегеҙ!

Социалистик промышленность работниктәре хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн, продукция етештереүҙе арттырыу һәм сифатын күтәреү һәм уның үҙҙә тешеү хаҡын арзанайтыу өсөн көрәшергә саҡырылғандар.

Социалистик ауыл хужалығы эшсәндәре алдына ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын артабан күтәреү, общественный малсылыҡты бөтә яҡлап үҫтереү һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү бурыстары ҡуйыла.

— Ауыл хужалығы эшсәндәре! 1951 йылда бөртөклө һәм техник культураларҙың урожайлылығын һәм валовой йыйымын байтаҡ күтәреүгә, общественный малдар һанының һәм продукт биреүсәнлегенең артыуына өлгәшәйек! Халыҡ өсөн аҙыҡ-түлек һәм промышленность өсөн сырьё муллығын булдырайыҡ!

Ауыл хужалығы работниктәренең иң беренсе бурысы — яҙғы сәсеүҙе өлгөлө үткәреү, ауыл хужалығы фәне өлгәшеүҙәрен һәм колхоздарҙың, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың алдынғы тәжрибәһен производствоға киң индереү, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу, ауыл хужалығы артеленең Уставын — колхоз тормошоноң төп законын изге һаҡлау.

Хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү тураһында ҙур хәстәрлек күреүсе большевиктар партияһы етәкселегендә беҙҙең халҡыбыҙ культура төҙөлөшө өлкәһендә гүзәл уңыштарға өлгәште. Идеология мәсьәләләре буйынса партия ҡарарҙары, тел ғилеме мәсьәләләре буйынса иптәш Сталиндең классик хеҙмәттәре фән, әҙәбиәт һәм искусство работниктәрен социалистик культураны артабан күтәреү өсөн көрәштә ҡоралландырҙылар.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты беҙҙең совет интеллигенциябыҙҙың күп һанлы армияһына мөрәжәғәт итеп былай тип саҡыра:

— Ғилми учреждениелар һәм юғары мәктәп работниктәре! Алдынғы совет фәненең артабан сәскә атыуы өсөн көрәшегеҙ! Ғилми эштә ижади тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе ҡыйыуыраҡ йәйелдерегеҙ! Фән һәм техниканы яңы тикшеренеүҙәр, асыштар һәм уйлап табыуҙар менән байытығыҙ! Халыҡ хужалығы өсөн специалистар әҙерләүҙең сифатын күтәрегеҙ!

— Әҙәбиәт, искусство, кинематография работниктәре! Үҙ оҫталығығыҙҙың камиллеген күтәрегеҙ, бөйөк совет халҡына лайыҡлы булған юғары идеялы яңы художестволы әҫәрҙәр булдырығыҙ!

— Уҡытыусылар, халыҡ мәғарифе работниктәре! Уҡыусыларҙы фән нигеҙҙәренең белемдәре менән ҡоралландырығыҙ! Беҙҙең йәштәребеҙҙе совет патриотизмы рухында тәрбиәләгеҙ, коммунизмды актив төҙөүселәрҙе әҙерләгеҙ!

Советтәр Союзы ышаныслы рәүештә коммунизм еңеүенә бара. Беҙҙең экономикабыҙ күтәрелештә. Илебеҙ халыҡ хужалығының ныҡ үҫеүе хеҙмәтсәндәрҙең көнкүрешен артабан яҡшыртыуҙы тәьмин итте.

Капиталистик системанан хужалыҡтың совет социалистик системаһының бөйөк өҫтөнлөктәре һуғыштан һуңғы йылдарҙа тыныс төҙөлөш еңеүҙәрендә яңы көс менән күренде. Еңгән социализм иленең һуғыштан һуңғы үҫеш йомғаҡтарын капиталистик илдәрҙәге хәл менән сағыштырып, сит илдәрҙәге миллионлаған кешеләр киләсәктең социализмныҡы буласағына әлеге-әлә күберәк ышаналар. Улар капиталистик илдәрҙәге илара итеүселәрҙең ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыуҙарын, хеҙмәтсәндәрҙе эксплуатациялауҙы көсәйтеүҙәрен, уларҙы аслыҡҡа һәм хәйерселеккә дусар итеүҙәрен күрәләр.

Миллионлаған кешеләр Советтәр Союзында гигант тыныс ижади эш барыуын, совет халҡының үҙенең бөтә көстәрен коммунистик төҙөлөшкә биреүен һәм яңы тормош төҙөү юлына баҫҡан халыҡтарға туғандарса ярҙам итеүен күрәләр.

Беҙҙең илебеҙҙә коммунистик төҙөлештең бөйөк эшендә бөтә совет халҡы актив ҡатнаша. Коммунистар партияһы, иптәш Сталин массаларҙың ижади инициативаһын һәм активлығын арымай-талмай күтәрергә саҡыралар. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең саҡырыуҙарында профсоюздар алдына 1951 йылғы халыҡ хужалығы планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киңерәк йәйелдереү, эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр тормошоноң материаль һәм культура кимәлен артабан күтәреү тураһында арымай-талмай хәстәрлек күреү бурысы ҡуйыла. Беҙҙең халҡыбыҙ совет ҡатын-ҡыҙҙарын — коммунизмды актив төҙөүселәрҙе ҡотлай һәм уларҙы беҙҙең социалистик Тыуған илебеҙ экономикаһының һәм культураһының яңы сәскә атыуы өсөн көрәшергә саҡыра.

Данлы коммунистар партияһы — беҙҙең илебеҙҙе яңы еңеүҙәргә алып барыусы Ленин — Сталин партияһы халыҡтың бөйөк мөхәббәте менән солғап алынған. Миллионлаған коммунистар һәм комсомолецтар Совет ҡороло[illegible] тормош нигеҙен ташкил иткән партия политикаһын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшеүселәрҙең беренсе сафтарында баралар. Беҙҙең бөтә халҡыбыҙ ғәйәт ҙур мөхәббәт һәм рәхмәт тойғоһо менән былай тип иғлан итә:

— Йәшәһен бөйөк Совет Социалистик Республикалар Союзы — беҙҙең илебеҙ халыҡтары дуҫлығының һәм данының таянысы, бөтә донъяла тыныслыҡтың ҡаҡшамаҫ терәге!

— Йәшәһен совет халҡының һуғыштарҙа сыныҡҡан авангарды, беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы бөйөк коммунистар партияһы, Ленин — Сталин партияһы!

— Ленин байрағы аҫтында, Сталин юлбашсылығында — алға, коммунизм еңеүенә!

(«Правда» газетаһының 1951 йыл 27 апрелдәге баш мәҡәләһе).

Өфө ҡала партия ойошмаһының X конференцияһында һайланған ВКП(б) ҡала комитетенең составы

ВКП(б) ҡала комитете члендәре

1. Бабуркин И. И.	26. Козенко В. П.	52. Сәләхетдинова М. Н.
2. Балезин Г. А.	27. Козлов Н. А.	53. Саинов Т. Ш.
3. Бабанов С. Э.	28. Котельникова А. П.	54. Сәитбатталов С. Ф.
4. Валиев Г. Ш.	29. Кошелев А. Д.	55. Селых М. П.
5. Вандышев П. Н.	30. Кузькин С. И.	56. Сибағатуллин Н. Ш.
6. Виноградов В. Я.	31. Кузнецова П. П.	57. Сибирцев Ф. Г.
7. Волгарев Н. П.	32. Ҡорбанғәлиев Х. З.	58. Сиражетдинова М. Н.
8. Гаров Ш. Г.	33. Липатов И. А.	59. Смирнова С. П.
9. Ғафаров Г. Г.	34. Ломакин П. А.	60. Соловьева А. Р.
10. Герасименко С. А.	35. Масленников Г. И.	61. Степанов М. С.
11. Герасимов А. С.	36. Мозговой В. Е.	62. Сурин С. А.
12. Голодобов А. А.	37. Мостафин Х. М.	63. Уласенко Я. Г.
13. Гришко А. П.	38. Набиуллин Ш. Г.	64. Уахин В. И.
14. Гусев Ф. С.	39. Назаров М. С.	65. Урзабаев Н. Р.
15. Должиков В. Н.	40. Назиров Ш. Н.	66. Феклин А. А.
16. Егоров А. Г.	41. Нафиков З. З.	67. Филиппов А. Ф.
17. Енишеева У. С.	42. Петровский Б. П.	68. Фирсанов Б. Ф.
18. Ермолаев А. К.	43. Печатнов О. П.	69. Фомин П. М.
19. Зәкәфуранов Ф. З.	44. Преображенский П. М.	70. Фомичева О. В.
20. Залавин Б. П.	45. Радзюк А. Н.	71. Хәмидова С. Г.
21. Каменев П. И.	46. Ракитин В. М.	72. Чернова В. Ф.
22. Капустин Н. И.	47. Рахманкулов З. Х.	73. Шакирова Л. Ш.
23. Касимов Д. В.	48. Репин И. Г.	74. Шафиков Ғ. Ф.
24. Киреева М. П.	49. Рышков М. П.	75. Шерстнев Л. П.
25. Ковригин-Порфирьев П. П.	50. Сәғитов У. А.	76. Иосонова Б. А.
	51. Садоков И. А.	77. Янгиров М. Я.

ВКП(б) ҡала комитете члениогенә кандидаттар

1. Волнева П. М.	6. Назаренко А. К.	11. Рачков В. Ф.
2. Кәримов М. С.	7. Никулин Н. М.	12. Сошин А. Н.
3. Коновкин П. Т.	8. Павлов Е. В.	13. Степин В. П.
4. Кондратьев А. М.	9. Пономарев С. Д.	14. Удалов Н. Д.
5. Михайлов Н. А.	10. Пятаков П. М.	15. Хрусталев Г. П.

ВКП(б) ҡала комитетенең ревизия комиссияһы составы

1. Аладуров В. Г.	4. Морозова М. Ф.	6. Усачев П. П.
2. Балдин А. Ф.	5. Завалищин М. А.	7. Фәрхетдинова М. Ф.
3. Борота П. П.		

ВКП(б) Өфө ҡала комитетенең пленумы

26 апрелдә Өфө ҡала партия ойошмаһының X конференцияһында һайланған ВКП(б) ҡала комитетенең беренсе пленумы булып үтте.

Пленум ойоштороу мәсьәләләрен ҡараны.

ВКП(б) ҡала комитетенең беренсе секретаре итеп иптәш **Х. М. Мостафин**, икенсе секретарь итеп иптәш **И. И. Бабуркин** һайланды.

ВКП(б)-ның ҡала комитете секретарҙары итеп **А. Р. Соловьева, И. Г. Репин, З. З. Нафиков** иптәштәр һайландылар.

ВКП(б) ҡала комитетенең бюро члендәре итеп **Х. М. Мостафин, И. И. Бабуркин, А. Р. Соловьева, И. Г. Репин, З. З. Нафиков, Н. И. Капустин, Ш. Н. Назиров, Г. Ш. Валиев, Ф. Г. Сибирцев** иптәштәр һайландылар.

Пленум ВКП(б) ҡала комитетенең бүлек мөдирҙәрен раҫланы. Партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлеге мөдире итеп **С. А. Сурин**, промышленность-транспорт бүлеге мөдире итеп **О. П. Печатнов**, ҡала хужалығы бүлеге мөдире итеп **И. А. Садоков**, план-финанс-сауҙа бүлеге мөдире итеп **О. В. Фомичева** иптәштәр һайланды.

Баҫыу эштәре көндәлеге

ИРТӘ КУЛЬТУРАЛАР СӘСЕҮ ТАМАМЛАНДЫ

Мәкәр. Районың игенселәре Май алды социалистик ярышында алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр. «Ҡашаҙаҡ», «Ҡыҙыл таң», «Ҡыҙыл Байраҡ» һәм «Красный партизан» колхоздары районда беренсе булып, иртә культураларҙы сәсеүҙе яҡшы сифатлы итеп һәм юғары агротехник кимәлдә тамамланылар.

Коммунист иптәш Сабиров етәкселек иткән «Ҡашаҙаҡ» колхозы иртә культуралар сәсеү планын 23 апрелгә 102,5 процентҡа үтәне.

Яҙғы баҫыу эштәрендә бригадалар ара социалистик ярышта иптәш Ғарифуллин етәкселек иткән икенсе бригада еңеп сыҡты. Был бригада иртә культуралар сәсеүҙе 5 эш көнөндә тамамлап, колхоздың Күсмә Ҡыҙыл байрағын яулап алды. Бригаданың алдынғы члендәре Ибраһимов, Дилмөхәмәтов, Ғайнуллин, Ибраһимова иптәштәр көндәлек эш нормаларын 165 процентҡа үтәнеләр. Сәскес машинаһында эшләүсе Ғайнуллин иптәш тә үҙенең стахановсы эше менән башҡаларға өлгө күрһәтте.

З. Низамов.

Трактористтарҙың эш өлгөләре

Өфө районы «Гудок» колхозын 6 йыл буйына иңде иптәш Скарняков етәкселек иткән Моторный МТС-ының алдынғы трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Бригада йыл һайын производство заданиеларын арттырып үтәй.

Бригада члендәре баҫыу эштәре башланғанға тиклем үк План Бүлеүсетен саҡырыуына ҡушылып, һәр бер 15 ат көслө тракторға 1200-әр гектар ер эшкәртергә йөкләмә алғайнылар.

Баҫыу эштәренең беренсе көнөнән үк трактористар яҡшы эш күрһәткестәре бирәләр. Трактористтарҙан Саламатов, Тихонов иптәштәр көндәлек эш нормаларын 150 процентҡа үтәйҙәр.

Хәҙер колхоз баҫыу эштәрен дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә, иртә культуралар сәсеүҙе тамамлау алдында тора.

М. Баранов.

Аҡъяр совхозында

Башҡортостан бөртөклө ашлыҡ совхоздары 1950 йылда баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу планын 122,4 процентҡа үтәгәйнеләр. Совхоздар быйыл да яҙғы осорҙа йыллыҡ планды арттырып үтәү өсөн көрәшәләр.

Аҡъяр совхозы (директоры иптәш Лихошанов) 23 гектар майҙанда, «Красная Башкирия» совхозы 36 гектар майҙанда ағас ултырттылар.

И. Новоселов.

ЙОМҒАҠЛАУ ЗАНЯТИЕЛӘРЕН НЫҠЛЫ ӘҘЕРЛЕК МЕНӘН ҮТКӘРЕРГӘ

Беҙҙең большевистик партиябыҙ үҙ члендәренең марксистик-ленинсе теорияға эйә булғанлығы менән көслө. Марксистик-ленинсе теорияға эйә булыу мәсьәләһен партиябыҙ үҙ тарихының бөтә осоронда иғтибар үҙәгендә тотто һәм тота.

«...**Кадрҙарҙы үрләтеү, уларҙы һайлап алыу, уларҙы урынлаштырыу эшен ҡәнәғәтләнерлек итеп ҡуйырға мөмкин; ләкин әгәр быларҙың бөтәһе була тороп та беҙҙең партия пропагандабыҙ ни өсөн дә булһа аҡһай башлаһа, әгәр кадрҙарыбыҙға марксистик-ленинсе тәрбиә биреү эше йомшара башлаһа, әгәр был кадрҙарҙың политик һәм теоретик кимәлен күтәреү буйынса беҙҙең эшебеҙ йомшарһа һәм шул уңай менән кадрҙар үҙҙәре беҙҙең алға хәрәкәт итеүебеҙ перспективаһы менән ҡыҙыҡһынмай башлаһалар, беҙҙең эшебеҙҙең хаҡлығын аңламай башлаһалар һәм юғарынан булған күрһәтмәләрҙе һуҡыр һәм механик рәүештә үтәй торған перспективаһыҙ делягаларға әүерелеп китһәләр, — ул саҡта беҙҙең бөтә государство һәм партия эшебеҙ һис һүҙһеҙ йомшарырға тейеш**», тип күрһәтте иптәш Сталин.

Республикабыҙҙың партия ойошмалары, партиябыҙ Үҙәк Комитетының һәм иптәш Сталиндең күрһәтмәләрен үтәп, кадрҙарҙың идея-политик кимәлдәрен күтәреү буйынса бик ҙур эш башҡаралар. Партия мәғарифе селтәрендә уҡыу быйыл башҡа бөтә йылдарҙағыға ҡарағанда, ойошҡан рәүештә башланды. Быйыл Башҡортостан партия ойошмаларында кадрҙарға марксистик-ленинсе белем биреү өсөн «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса 3012 түңәрәк эшләй, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 1676 түңәрәк эшләй. 20 меңдән артыҡ кеше марксистик-ленинсе теорияны үҙ алдарына уҡый, унарлаған меңдәрсә кадрҙар партия мәғарифенең башҡа формалары менән солғап алынғандар.

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙың сифатын күтәреү буйынса партия ойошмалары тарафынан күрелгән саралар арҡаһында байтаҡ ҡына урындарҙа партия уҡыуҙары уңышлы ғына алып барылдылар, коммунистар үҙҙәренең политик белемдәрен күтәреү өлкәһендә серьёз эшләй башланылар, партия мәғарифе эшенә партия ойошмаларының етәкселеге яҡшырҙы. Быға миҫал итеп, Өфө ҡалаһының күп кенә предприятие партия ойошмаларын, Черниковск, Белорет ҡалаһы предприятиеларының партия ойошмаларын, Баймаҡ, Йомағужа, Әбйәлил районларының байтаҡ ҡына партия ойошмаларын алырға мөмкин.

Ләкин шуның менән бергә, партия мәғарифенә серьёз иғтибар биреп еткермәгән партия ойошмалары ла бар әле. Партияның күптән түгел генә булып үткән район конференцияларында коммунистер ҡайһы бер район комитеттарын партия мәғарифенә йомшаҡ етәкселек иткәнлектәре өсөн ғәйепләнеләр. Ҡандра, Илеш, Благовар, Ҡыйғы районларының байтаҡ ҡына партия ойошмаларында партия уҡыуҙары түбән идея кимәлендә үтәләр. Белокатай районында пропагандистар менән тейешле эш алып барылмай.

Хәҙер партия ойошмалары алдында иң яуаплы бурыс — партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙы ойошҡан рәүештә тамамлау бурысы тора. Был бурысты уңышлы хәл итеү өсөн партия ойошмалары партия мәғарифе селтәрендә йомғаҡлау занятиеларын үткәреүгә ныҡлап әҙерләнергә тейештәр.

Партия мәғарифе селтәрендә йомғаҡлау занятиеларын үткәреү теге йәки был пропагандистың ғына эше түгел. Ул, асылда, партия ойошмаларының кадрҙарҙы марксистик-ленинсе теория менән ҡоралландырыу эшенә ниндәй етәкселек итеүҙәренә лә, коммунистарҙың үҙ политик белемдәрен күтәреү өлкәһендә нисек эшләүҙәренә лә йомғаҡ яһау булып тора. Шуға күрә йомғаҡлау занятиеларын үткәреүгә әҙерлек хәҙер, партияның түбән ойошмаларынан алып, район һәм ҡала ойошмаларына тиклем бөтәһенең дә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш.

Партияның түбән ойошмалары партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙы тамамлауға әҙерлеккә арналған йыйылыш үткәреп, унда коммунистарҙың иғтибарын йомғаҡлау занятиеларын юғары идея-политик кимәлдә үткәреүгә туплауға тейештәр. Партияның район комитеттары агитация һәм пропаганда бүлектәренән райондағы һәр бер түңәрәк һәм мәктәптә йомғаҡлау занятиелары үткәреүҙе, уларҙың уҡыу программаһын нисек үтеүҙәренә ҡарап, ныҡлы планлаштырыу талап ителә. Шуның менән бергә, программа материалын үтеүҙә артта ҡалыусы ҡайһы бер партия ойошмаларының программа үтеүҙе ашыҡтырыу, аҙнаһына икешәр занятие үткәреү, шуның менән материалды үҙләштереүгә зарар итеүҙәренә һис юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙар быйыл да, үткән йылдарҙағы кеүек, ауыл ерҙәрендә май аҙаҡтарында, ҡалала июнь аҙаҡтарында тамамланасаҡ. Ләкин был әле бөтә түңәрәк һәм мәктәптәрҙең дә мотлаҡ ошо срокта эшен тамамларға тиеш һүҙ түгел. Программа менән билдәләнгән материалдарҙы үтеүҙә ниндәй ҙә булһа сәбәптәр менән артта ҡалған түңәрәк йәки мәктәп үҙенең эшен нормаль дауам итергә тейеш. Программаны үтеүҙе ашыҡтырыуға, аҙнаға бер урынына ике занятие үткәреү, занятие сәғәттәрен арттырыу кеүек үткән йылғы зарарлы хаталар быйыл ҡабатланмаҫҡа тейеш.

Партия кабинеттары йомғаҡлау занятиеларын үткәреүҙә пропагандистарға методик ярҙам күрһәтергә, марксистик-ленинсе теорияны өйрәнеүселәргә ярҙамға лекциялар, консультациялар ойошторорға бурыслылар.

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙар өҫтөнән етәкселек хәҙер айырыуса ныҡ талап итә. Сөнки ауыл ерҙәрендә баҫыу эштәре башланыу, ҡала ерҙәрендә отпускалар башланыу арҡаһында, ҡайһы бер урындарҙа партия уҡыуҙарына иғтибарҙы йомшартырға ынтылыусылар бар. Ундай ҡараштарға ҡырҡа отпор бирергә кәрәк. Хужалыҡ эшенә етәкселек итеүҙе кадрҙарҙың идея-теоретик кимәлдәрен күтәреү менән бергә ҡушып алып бара белеү хәҙер партия ойошмаларынан айырыуса ныҡ талап итеү.

Партияның район һәм ҡала комитеттарының бурысы — хәҙер бөтә коммунистарҙың иғтибарын үтелгән бөтә программа материалын ныҡлы хәтерендә ҡалырлыҡ итеп ҡабатлап сығыуға туплауҙан, түңәрәктә, мәктәптә, үҙ алдына уҡып алған белемен нығытыуҙарына, уны практикала ҡуллана белеүҙәренә өлгәшеүҙән тора.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың йомғаҡтары тураһында Белдереү айырым брошюра итеп баҫып сығарылды

Политик әҙәбиәт Государство издательствоһы СССР Государство план комитетының һәм СССР Үҙәк Статистика Управлениеһының «СССР-ҙың 1946 — 1950 йылдарға иҫәпләнгән (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планының үтәлеш йомғаҡтары тураһында» Белдереүенең тексын брошюра итеп баҫып сығарҙы.

Брошюраның тиражы — 500 мең дана.

(ТАСС).

ӨФӨ ҠАЛА ПАРТИЯ ОЙОШМАҺЫНЫҢ X КОНФЕРЕНЦИЯҺЫ

ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитете секретаре иптәш Х. М. Мостафинден партия ҡала комитете эше тураһындағы отчет доклады буйынса фекер алышыуҙар

Өфө ҡала партия ойошмаһының 25 — 26 апрелдә үткән X конференцияһында ҡала комитете секретаре иптәш Мостафиндең ВКП(б) Өфө ҡала комитетенең эше тураһындағы отчет докладь һәм ревизия комиссияһы председателе иптәш Аҙаҙуровтың отчет докладь буйынса фекер алышыуҙарҙа партияның Жданов райкомы секретаре иптәш **Герасимов** беренсе булып сығыш яһаны.

— Партияның ҡала комитете, — тине иптәш **Герасимов**, отчет осоронда байтаҡ ҡына эштәр башҡарҙы һәм был һәр кемгә билдәле. Ләкин ВКП(б)-ның ҡала комитете эшендә бик серьез етешһеҙлектәр бар. Ҡала партия ойошмаһында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү етерлек йәйелдерелмәгән. Партияның ҡала комитете лә уны тейешенсә йәйелдереү сараһын күрмәй. Мин райкомдың ойоштороу эштәре буйынса ҡала комитете пленумында отчет яһаным. Шул ваҡыт инструкторҙарҙың роле тарайтылыуы, уларға яуаплы поручениелар бирелмәүе тураһында критик замечаниелар яһарға тура килде. Ләкин миңә шунда уҡ ҡала комитете етәкселәре ундай замечаниелар яһау дөрөҫ түгел, тип раҫларға тырыштылар. Был үҙе үк иптәш Мостафиндең докладында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүгә ни өсөн етерлек урын бирелмәүен асыҡ күрһәтә.

Партияның ҡала комитете башлаған эшен аҙағына тиклем илтеп еткереүгә өйрәнмәгән. Ҡала комитетенең аппараты мәсьәләләрҙе бик һүлпән хәл итә. Миҫал өсөн тирмән заводы менән булған мәсьәләне алырға мөмкин. Заводтың эшләп сығарыу ҡеүәте ҙур. Ләкин әҙер продукцияны ҡуйыр өсөн урын юҡ. Шулай уҡ бәртәкле ашлыҡтың ваҡытында килтерелмәүе арҡаһында завод күбеһенсә эшләмәй ултыра. Был мәсьәлә менән ҡала комитете шөғөлләнде, ләкин аҙағына тиклем илтеп еткермәне. Ҡала комитетенең IV пленумында күрһәтелгән мәсьәлә менән дә хәл шулай булды. Башта был мәсьәлә буйынса шау-шыу күтәрелде. Ә һуңынан пленум ҡарарын тормошҡа ашырыу урынында туның ҡалды.

Унан ары, иптәш Герасимов ВКП(б)-ның Жданов райкомының эшенә, районлағы промышленность предприятиеләренең эшенә туҡталды.

— Мин, — тине үҙенең сығышында Дим станцияһының паровоздар депоһы машинисы иптәш **Шерстнев**, — тимер юлы транспорты, атап әйткәндә, Дим станцияһының паровоздар депоһы эшенә туҡталырға теләйем. Докладсы иптәш Мостафин транспорт тураһында бик аҙ туҡталды һәм Дим тимер юлы узелының эшен яҡшыртыу буйынса ҡала комитетенең ниндәй ярҙам күрһәтеүе тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәне, ә беҙҙең эшебеҙҙә бик ҙур етешһеҙлектәр бар, план үтәлешенең күрһәткестәре түбән. Паровоздарҙың тәүлек йөрөшө планы үтәлмәй. Ә партияның ҡала комитете новаторҙар, бишйөҙсөләр хәрәкәте эшенән алыҫлашты һәм был эште партия райкомына һәм политик бүлеккә генә ышанып ташлап ҡуйҙы. Был мәсьәлә Өфө тимер юлы етәкселәрен (Козенко һәм Ракитин иптәштәрҙе) һис тә ҡыҙыҡһындырмай. Паровозсылар йөк ташыу планын арттырып үтәнеләр, ләкин был үтәлеш паровоздарҙы арттырыу иҫәбенә үтәлде. Әгәр ҙә партияның ҡала комитете бишйөҙсөләр хәрәкәте менән ҡыҙыҡһынһа паровоздарҙың һанын арттырырға һәм артыҡ ағылулыҡ тоторға кәрәк булмаҫ ине. Беҙҙә паровоздар һәр бер әйләнештә уртаса унар сәғәткә артыҡ йөрөйҙәр.

Паровозсылар араһында политик-тәрбиә эштәре алып барыу өсөн ҡыҙыл мөйөш асырға кәрәк. Беҙҙә буш торған бина ла бар. Был турала райкомға ла, горкомға ла мөрәжәғәт итеп ҡараныҡ, ләкин әле булһа тейешле ярҙам ала алманыҡ. Дим районын Өфө ҡалаһынан Ағиҙел йылғаһы айыра. Ләкин даими күпер һалыу мәсьәләһе һаман да һүҙылә. Шул арҡала Дим станцияһында йәшәгән эшселәр ҙур ҡыйынлыҡтар кисерәләр.

— Партия ойошмаларының көндәлек ярҙамында, — тине үҙенең сығышында ит комбинаты директоры иптәш **Ҡорбанғәлиев**, — комбинат коллективы социалистик ярыштың киң йәйелдереп, үҙенең биш йыллыҡ планын срогынан алда үтәне. Валовой продукция етештереү һуғыштан һуңғы йылдарҙа 50 процентҡа, ә продукцияның ассортименте 1940 йылға сағыштырғанда, 2,5 тапҡырға артты. Комбинат быйылғы йылдың 1 квартал планын 114 процентҡа еткереп үтәне. Ләкин комбинаттың эшендә етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Комбинаттың ҡайһы бер эшселәре ағылулыҡҡа, электр энергияһына һәм һыуға экономия яһау өсөн көрәшмәйҙәр. Беҙгә малды күбеһенсә 4 кварталда ғына тапшыралар. Шунлыҡтан беҙ йыл әйләнәһенә нормаль нагрузка менән эшләй алмайбыҙ. Тағы шуны ла әйтергә кәрәк, беҙгә әҙерләүсе ойошмалар бик түбән кәрлектәге малдарҙы килтерәләр. Был үҙ нәүбәтендә етештерелә торған продукцияның сифатын түбәнәйтә.

ВКП(б)-ның Ленин райкомы секретаре иптәш **Ҡорбанғәлиева** үҙенең сығышында партия-ойоштороу һәм партия-политик эш мәсьәләләренә туҡталды.

Түбәнге партия ойошмаларының ролен әҙләкһеҙ күтәрә барыу, уларҙың эштәрен активләштереү, — тине иптәш Ҡорбанғәлиева, — партияның район һәм ҡала комитеттарының мөһим бурысы булып тора. Бына шуны иҫәпкә алып, ВКП(б)-ның Ленин райкомы хеҙмәтсәндәр массаһы менән партия ойошмаларының һәм коммунистарҙың бәйләнешен ныҡыта барыуға ҙур иғтибар бирә. Секретарҙарҙан, бүлек мөдирҙәренән алып инструкторҙарға тиклем райкомдың бөтә работниктәре үҙҙәренең күпселек ваҡыттарын партияның түбәнге ойошмаларында үткәрәләр, ундағы етешһеҙлектәрҙе асалар һәм уларҙы бөтөрөү сараларын күрәләр. Урында, түбәнге партия ойошмаларында булыу, шулай уҡ, яңы, файҙалы инициативаларҙы, алдынғыларҙың ҡиммәтле башлангыстарын ваҡытында күрергә һәм уларҙы бөтә эшселәрҙең дә достояниеһе итергә мөмкинлек бирә. Бюро ултырыштарында агитацион-массовый һәм ойоштороу-политик эштәр, хеҙмәттең алдынғы методтарын һәм социалистик ярыштың яңы формаларын пропагандалау буйынса цех партия ойошмалары секретарҙарының докладтары тыңлана.

Ойоштороу-партия эштәре тураһындағы мәсьәләләр райкомдың эшендә төп урынды алып тора. Райком работниктәре предприятиеларҙа эшләүсе коммунистарға хеҙмәтсәндәр араһында политик агитация алып барыу эшендә практик ярҙам күрһәтәләр. Райком һәр айҙа регуляр рәүештә партия эшенең төрлө мәсьәләләре буйынса партия ойошмалары секретарҙарының семинарҙарын һәм тәжрибә уртаҡлашыу кәңәшмәләрен үткәрә. Ләкин был мәсьәләләрҙә партияның ҡала комитете, бигерәк тә уның партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлеге был эштә беҙгә ярҙам итмәй. Отчет осоронда ВКП(б)-ның ҡала комитете партия эшендә ыңғай тәжрибәләрҙе дөйөмләштереү һәм таратыу мәсьәләләре менән шөғөлләнмәне. Ҡалалағы биш райкомдың һәр ҡайһыһы үҙе нисек белһә, шулай эшләй. Яҡшы эшләүсе райком секретарҙарының эш тәжрибәләре башҡаларға күсерелмәй. Был өлкәлә партияның ҡала комитетенән киҫкен һынылыш яһау талап ителә.

Партияның Ленин райкомы артта ҡалыусы предприятиеларҙың партия ойошмаларына айырыуса иғтибар итә. Беҙҙең районда «Швейгалантерея» һәм буяу заводы артта ҡалып килә ине. Был предприятиеларҙың эшен ентекләп өйрәнеү һөҙөмтәһендә унда партия ойошмалары үҙҙәренең эшмәкәрлектәрен йомшарттҡанлыҡтары, производство мәсьәләләрен бөтөнләй күҙ уңынан төшөрөп ҡалдырғанлыҡтары асыҡланды. Райком был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү сараһын күрҙе. Һөҙөмтәлә был предприятиелар 1950 йылда һәм быйылғы йылдың беренсе кварталы планын уңышлы үтәп сығыуға өлгәштеләр. Ләкин бында ла партияның ҡала комитете беҙгә ярҙам күрһәтмәне.

Башҡорт АССР-ы Верховный судының председателе иптәш **Сайпушев** үҙенең сығышын, социализмдан аҡрынлап коммунизмға күсеү осоронда, социалистик милкте һаҡлауҙың әһәмиәтенә арнаны һәм был өлкәлә партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының хеҙмәтсәндәр араһында тәрбиә эштәре алып барыуҙа булған етешһеҙлектәренә туҡталды.

Партияның IX ҡала конференцияһының ҡарарҙарын үтәп, — тине 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы партия ойошмаһы секретаре иптәш **Седых**, — фабриканың партия ойошмаһы үҙенең эшендә байтаҡ уңыштарға өлгәште. Ул ойоштороу-партия һәм хужалыҡ мәсьәләләре менән күберәк шөғөлләнә башланы. Эшләп сығарыла торған продукцияның сифатын күтәреү, үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытыу, коммунистарҙың һәр ҡайныһына партия поручениеләре биреү һәм үтәлеште тикшереү партия бюроһында, дөйөм фабрика һәм цех партия ойошмалары йыйылыштарында регуляр ҡарала башланы. Шул арҡала фабрика 1949 йылға ҡарағанда, үткән йылды уңышлы эшләне. Йыллыҡ план 28 декабрҙә үтәлде. Пландан тыш йөҙәр меңләгән һумлыҡ средствоға экономия яһалды. Эшләп сығарыла торған продукцияның сифаты байтаҡ яҡшырҙы. Партия члендары Федорова һәм Агеева иптәштәр етәкселек иткән цехтарҙа агитацион-массовый һәм политик-тәрбиә эштәре айырыуса яҡшы ҡуйылған.

Унан ары иптәш Седых производство алдынғыларының эштәренә туҡталып, фабриканың стахановсылары, алдынғы кешеләре, уларҙың эш тәжрибәләре тураһында һөйләне.

— Хәҙерге шарттарҙа, беҙҙең илебеҙ коммунистик төҙөлештәң байаҡ бурыстарын хәл иткән бер ваҡытта, — тине ВКП(б)-ның Дим райкомы секретаре иптәш **Залавин** үҙенең сығышында, — урындағы партия ойошмаларына етәкселек итеү методын камиллаштереү, уларҙың ойоштороу эштәренең кимәлен күтәреү талап ителә. Отчет осоро, партия Үҙәк Комитетенең һәм иптәш Сталиндең күрһәтмәләре нигеҙендә, партия ойошмаларының хужалыҡ эшендәге уңыштарға партия-политик эш аша өлгәшеүгә табан боролош яһауҙары менән характерлы булып тора. ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитете ошондай боролошто тәьмин итеүҙә ҡаланың партия ойошмаларына ниндәй йогонто яһаны һуң?

«Правда» газетаһының тәнҡитле сығыштарына, Өлкә Комитет бюроһының ҡарарына ҡарамаҫтан, ВКП(б) ҡала комитетенең үҙ эшендә киҫкен һынылыш яһауы күренмәй әле. Докладсы иптәш Мостафин үҙенең сығышында ҡала комитетенең үҙенең эшен тамырынан ҡайтанан ҡороуын сағылдыра алманы.

Партияның ҡала комитете бик серьез мәсьәләләрҙе ҡарап, мөһим ҡарарҙар сығара, кәңәшмәләр үткәрә. Былар бөтәһе лә кәрәк әлбиттә. Ләкин ҡала комитете работниктәре тарафынан партияның түбәнге ойошмаларында, райкомдарҙа йәнле оператив эш бик аҙ үткәрелә. Лекторҙарҙың һәм иптәш Мостафиндең үҙенең сығышын яһауын алмағанда, ҡала комитетенең секретарҙары һәм бүлек мөдирҙәре хеҙмәтсәндәрҙең йыйылыштарында, коммунистар алдында политик докладтар менән сығыш яһарға һаман да ашыҡмайҙар әле. Партияның ҡала комитете райкомдарҙың һәм түбәнге ойошмаларҙың эшен дөйөмләштереп, газета биттәрендә сығыш яһау сараһын күрмәй. Бишйөҙсөләр хәрәкәтен йәйелдереү менән дә ҡала комитетенең эше шулай тора.

Беренсе номерлы икмәк заводы партия ойошмаһының секретаре иптәш **Филотенков** үҙенең сығышында түбәндәге ойошмалар менән, бигерәк тә, коммунистары аҙ булған партия ойошмалары менән эшләүгә, уларға ярҙам күрһәтеүгә ҡала комитетенең әле булһа етерлек иғтибар итмәүен әйтте.

Дим райкомы секретаре иптәш Залавин, — тине ул, — ҡала комитетенең работниктәре Дим станцияһында булмайҙар тип, әйтеп китте. Дим алыҫ бит ул. Беҙ бына йәнәшә торабыҙ. Шулай ҙа беҙҙә ҡала комитетенең етәксе работниктәренең булғандары юҡ. Беҙҙең завод ҡала халҡын икмәк менән тәьмин итә. Производство планын да үтәп килә. Үҙған йылды миллион һумдан артыҡ пландан тыш накопление бирҙе. Шулай ҙа иптәш Мостафин беҙҙең заводтың яҡшы яғынан да, етешһеҙлектәре тураһында булһын бер һүҙ ҙә әйтмәне. Беҙҙең заводтың эшселәре лә, коммунистары ла күп түгел. Шулай ҙа уларҙың ҡала етәкселәрен күрәһе килә. Ләкин етәкселәр беҙҙә булмайҙар.

— Отчет осоронлағы 16 айға яҡын ваҡыт эсендә, — тине ВКП(б)-ның Киров райкомы секретаре иптәш **Киреева**, — ҡаланың партия ойошмалары үҙҙәренең эштәрендә байтаҡ уңыштарға өлгәштеләр. Ләкин ҡала комитетенең үҙенең эшендә бик серьез етешһеҙлектәр бар әле. Ҡала комитетенең бүлектәре менән райкомдың тейешле бүлектәре араһында ныҡлы бәйләнеш юҡ. Шул арҡала, ҡала комитете күптән түгел, райкомдар тарафынан үткәрелгән мәсьәлә буйынса түбәнге партия ойошмалары секретарҙарының семинарын саҡырҙы. Ҡала комитетенең пропаганда бүлеге һаман да насар эшләй. Ул райкомдарҙың пропаганда һәм агитация бүлектәренең мөдирҙәрен ни бары бер генә тапҡыр йыйнап һөйләште. Райком бүлектәренең мөдирҙәре тикшерергә кәрәк булған мәсьәләләр, улар алдына ҡуйырға бурыстар юҡмы ни? Билдәле булғанынса, райкомдарҙың бүлектәре ҡала комитете бүлектәренең ярҙамына мохтаждар. Мин, партияның ҡала комитете үҙенең эш стилен үҙгәртер, түбәнге ойошмаларға һәм райкомдарға яҡындан ярҙам итер, тип ышанам.

Иптәш Киреева, унан ары, Киров районының промышленность предприятиеләре валовой продукция эшләп сығарыу буйынса производство пландарын арттырып үтәнеләр, тип билдәләне. Ләкин ассортимент буйынса, тине ул, күп кенә предприятиелар пландарҙы үтәп еткермәйҙәр. Партияның 9-сы район конференцияһы райком артта ҡалыусы предприятиелар менән етерлек эш алып бармаған, шул арҡала районда артта ҡалыусы алты предприятие бар, тип билдәләгәйне. Конференция ҡарарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшеп, райком алты предприятиены эҙәкләктән сығарҙы. Һәм 1951 йылдың 1 кварталында планын үтәмәгән бер генә предприятие ҡалды. Партияның Киров райкомы алдында, конференция ҡарарҙарын тулыһынса тормошҡа ашырыу бурысы тора. ВКП(б)-ның ҡала комитете ярҙамында беҙ партия-политик һәм ойоштороу-партия эштәрен көсәйтеп, районыбыҙҙы алдынғылар сафына сығарасаҡбыҙ.

Урындағы Советтарҙың яңы составы, — тине Молотов район Советы исполкомы председателе иптәш **Фехшин**, — инде дүртенсе ай эшләй. Урындағы Советтарҙың ниндәй эштәрҙе башҡарыуҙары һәм нимәләр эшләргә йыйыныуҙары, партия ойошмаларынан ниндәй ярҙамға мохтаж булыуҙары тураһында әйтергә етерлек ваҡыт үтте. Молотов район Советының башҡарма комитете партия ҡала комитетенең VI пленумы ҡарарҙарын үҙенең эшенә нигеҙ итеп алды. Беҙ баштаһынан уҡ үҙ эшебеҙҙә, пленум күрһәткәнсә, тәнҡит йөҙөнән ҡарап, ҡайтанан ҡора башланыҡ. Район Советы исполкомының элекке составының эшендә коллегиаллек етешмәүен, эште мәҡсатҡа ынтылышлы итеп ҡороуға ынтылыш булмауын асыҡланыҡ. Һәм был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн ныҡлы план нигеҙендә эшләүгә күстек. Беҙ билдәле был ваҡыт эсендә иң кәрәкле принципиаль мәсьәләне тормошҡа ашырыуҙы мәҡсат итеп ҡуйыбыҙ. Хәҙер районыбыҙҙың халҡын ҡаланы төҙөкләндереү, райондың санитария торошон яҡшыртыу өсөн көрәшкә күтәрҙек. Беҙ ай һайын бына ошондай билдәле бер мәсьәләне күтәреп сығырға теләйбеҙ һәм ҡала партия ойошмаларының ярҙамында беҙ алла торған бурыстарҙы үтәйәсәкбеҙ.

БАССР Министрҙар Советы ҡарамағындағы архитектура эштәре управлениеһы начальнигы иптәш **Сәхәүетдинова** төҙөлөш ойошмаларын тәнҡитләне.

— Торлаҡ төҙөлөшө планы, — тине ул, — йыл һайын үтәлеп етмәй ҡала. 1950 йылда төҙөүселәр 10 мең квадрат метр күләмендәге торлаҡ майҙанын бирен еткермәнеләр. Шуға күрә лә хеҙмәтсәндәрҙең торлаҡҡа булған ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереп бөтөп булмай. Хөкүмәттең төҙөлөштөң үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм сифатын яҡшыртыу тураһындағы ҡарары ла үтәлеп еткерелмәне.

Төҙөлөш ойошмаларының планһыҙ, ритмһеҙ эшләүҙәре резервтарҙы тулыһынса файҙаланырға мөмкинлек бирмәй. Төҙөлөш ойошмалары иҫке ысул менән эшләйҙәр, яңы механизмдарҙы индереүҙә бик ҙур алмаусылыҡ күрһәтәләр. Төҙөлөш эшенең насар барыуы өсөн яуаплылыҡтың ҙур ғына өлөшө партияның ҡала комитетенә һәм ҡала Советы исполкомына төшә. Сөнки улар төҙөлөш ойошмаларына етерлек итеп, конкрет етәкселек итмәйҙәр. Төҙөүселәргә уларҙың үҙ өҫтәренә алған социалистик йөкләмәләрен үтәүҙә ярҙамды аҙ күрһәтәләр. Партияның ҡала комитете работниктәренә, беренсе нәүбәттә уның секретаре иптәш Бабуркинға, Мәскәү ҡалаһын реконструкциялауҙа һәм төҙөү эшендә ҙур иғтибар һәм хәстәрлек күрһәтеүсе Мәскәү партия ойошмаһы работниктәренән өлгө алырға кәрәк.

Өфө ҡалаһында бер-ике генә ҡатлы йорттарҙың төҙөлеүенә, ҡала төҙөлөшөнөң планын боҙоуҙарға юл ҡуйыу ҙур етешһеҙлектәрҙең береһе булып тора. Бындай төҙөлөштәр алдынғы техниканы файҙаланырға мөмкинлек бирмәй, материаль ҡиммәттәрҙе ваҡ объекттарға бүлгеләүгә килтерә.

Өфө тимер юл станцияһының начальнигы иптәш **Вершигоров** станция коллективының эше тураһында һөйләне. Коллектив йөк тейәү һәм бушатыу планын, шулай уҡ поездарҙы оҙатыу планын арттырып үтәй, Хеҙмәт етештереүсәнлеге 122,5 процентҡа тиклем күтәрелде, йөк тейәү һәм бушатыу эшенең үҙенә төшөү хаҡы 16,7 процентҡа кәмене. Пландан тыш ҙур суммала табыш алынды.

Ләкин станцияла тейәү һәм бушатыуға вагондар планда ҡаралғандан бик күп артыҡ тоторлалар. Был, беренсенән, клиенттарҙың яуапһыҙ ҡараштарынан, икенсенән, тейәү һәм бушатыу эштәре тик көндөҙ генә алып барылыуы, төндәрендә, йәкшәмбе көндәрендә һәм байрамдарҙа эш бөтөнләй туҡталыуы арҡаһында шулай була. Клиенттарҙың вагондарҙы бушатмай тотоуҙары уларҙың ҙур суммала штрафҡа тартылыуҙарына килтерә. Станция етәкселеге хөкүмәттең вагондарҙы буш тотоуҙы кәметеү тураһындағы ҡарарының тормошҡа ашырылыуын тәьмин итеүҙә һорап партияның ҡала комитетена бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итте. Ләкин был турала бер төрлө лә сара күрелмәй.

Клиенттар өсөн күмер складтарының булмауы станцияның нормаль эшләүенә бик ҙур тотҡарлыҡ яһай. ВКП(б)-ның ҡала комитете был мәсьәлә буйынса ҡарар сығарҙы, ләкин ул үтәлмәне. Күмер склады төҙәлмәне.

Иптәш Вершигоров унан ары, партияның ҡала комитете станцияның хужалыҡ етәкселәренә генә түгел, уның партия ойошмаһына ла етерлек ярҙам итмәй, ҡала комитетенең секретарҙары һәм инструкторҙары унда булмайҙар, тине.

— Ҡаланың комсомол ойошмаһы, — тине ВЛКСМ-дың ҡала комитете секретаре иптәш **Сибирцев**, — үткән йылда һап яғынан үҫте, ойошоу яғынан ныҡыны һәм партия ойошмаһының етәкселегендә хужалыҡ һәм политик бурыстарҙы хәл итеүҙә актив ҡатнаша. ВЛКСМ-дың XI съезы һәм комсомолдың ҡала конференцияһы ҡарарҙарын үтәй барып, комсомол ойошмалары йәштәр араһында бик ҙур тәрбиә эштәре алып баралар. Уларҙы коммунистик общество төҙөү эшендә актив ҡатнашыуға йәлеп итәләр.

Шулай ҙа әле күп кенә комсомол ойошмаларының эш кимәле ВЛКСМ-дың XI съезы һәм комсомол Өлкә Комитетенең V пленумы ҡуйған талаптарға яуап бирерлек түгел. Бигерәк тә комсомолецтарҙы һәм союздан тыш йәштәрҙе политик тәрбиәләү өлкәһендә ҙур етешһеҙлектәр бар. Ике меңсә яҡын комсомолец марксистик-ленинсе уҡыуҙарҙың бер генә төрө менән дә солғап алынмаған. Күп кенә политик мәктәптәр һәм түңәрәктәр программанан 20-шәр сәғәткә артта ҡалғандар.

Комсомол ойошмаларында союздың эске һәм тышҡы эштәрендә етешһеҙлектәр күп кенә. 40 проценттан ашыуыраҡ комсомол ойошмаларында йыйылыштар регуляр үткәрелмәй. ВЛКСМ Уставын боҙоу, члениәк взностарын ваҡытында түләмәү ваҡиғалары ла осрай, 800-ҙән артыҡ комсомолец учеттан төшмәйенсә башҡа урынға киткән. Ҡалала тәрбиә эшенең етерлек булмауы ВЛКСМ сафтарының аҡрын үҫеүенә килтерҙе. 170 түбәнге ойошмала бөтөнләй үҫеш юҡ. Улар иҫәбенә цемент заводы, ярма заводы, горместпром фабрикаларының комсомол ойошмалары инәләр.

Был һәм башҡа ошондай етешһеҙлектәр ВЛКСМ-дың ҡала һәм район комитеттарының түбәнге ойошмалар менән аҙ шөғөлләнеүҙәренең һәм уларға етерлек ярҙам күрһәтмәүҙәренең һөҙөмтәһе булып тора. Комсомол ойошмаларының эш кимәле, күбеһенсә, партия ойошмаларының етәкселегенә бәйләнгән. Ә партия ойошмалары үҙҙәренең етәкселек эштәрен бер ни тиклем яҡшыртһалар ҙа, ВКП(б) Өлкә Комитетенең V пленумы талаптарына яуап бирерлек кимәлгә күтәрелгәндәре юҡ әле. Ҡайһы бер түбәнге партия ойошмалары комсомолға дөйөм етәкселек итеү менән генә сикләнәләр. Уларҙы эштәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә юналтмайҙар. Ундай партия ойошмалары иҫәбенә паровоздар ремонтлау заводының партия ойошмаһы һәм башҡалар инәләр. ВКП(б) ҡала комитетенең работниктәре ВЛКСМ ҡала комитетенең бюро ултырышына, пленумдарына, актив йыйылыштарына килмәй башланылар.

ВКП(б)-ның Молотов райкомы секретаре иптәш **Волгарев** үҙенең сығышында былай тине:

— Иптәш Мостафин үҙенең докладында, партияның ҡала комитете үҙенең эшен ҡайтанан ҡорҙо, тине. Минеңсә, эш улай түгел әле. Иптәш Мостафин үҙенең эшен ҡайтанан ҡорһа ла, аппараттың эшендә үҙгәреш юҡ. Ултырыштарҙа, кәңәшмәләрҙә, актив йыйылыштарында беҙ етешһеҙлектәр тураһында күпме генә әйтһәк тә, улар әле булһа бөтөрөлөп еткәндәре юҡ.

Беҙҙә Ауыл хужалығы министерствоһының ремонт заводы насар эшләүе өсөн орлайҙар. Әгәр ҙә уның сырьеһы булмаһа, ул планды нисек үтәһен һуң? Завод ағыулыҡтар өсөн мискәләр етештерә. Ләкин уның бер табаҡ та тимере юҡ. Завод стендерҙар әҙерларгә тейеш. Ул дөйөм планлың 64 процентен тәшкил итә. Ләкин уның раҫланған чертежы юҡ. Завод комбайн һәм трактор моторҙарын ремонтларға тейеш, ләкин запас частар юҡ. Материалдарҙың булмауы заводты артта ҡалыуға килтерә. Беҙ партияның ҡала комитетенә бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт иттек, ләкин ярҙам ала алманыҡ.

Беҙҙә шулай уҡ паровоздар ремонтлау заводы партия ойошмаһында массовый-политик эштең насар ҡуйылыуы өсөн тәнҡитләйҙәр. Был бер ни тиклем шулай ҙа. Ләкин ҡала комитете пропаганда һәм агитация бүлеге беҙгә ниндәй ярҙам күрһәтте һуң? Ысынан да ул беҙгә бер төрлө лә ярҙам күрһәтмәй. ВКП(б) ҡала комитетенең идеологик мәсьәләләр менән шөғөлләнеүсе секретаре иптәш Нафиков ҡаланың Молотов районында булғаны юҡ. Дөрөҫ, ул лекцияларҙы күп уҡый. Уны был эштән бер ни тиклем бушатырға һәм уға партияның түбәнге ойошмаларында йышыраҡ булырға мөмкинлек бирергә кәрәк.

— Беҙҙә хеҙмәттең алдынғы методтарын индереү тураһында бик күп һүҙ алып барыла, — тине паровоздар ремонтлау заводы партия ойошмаһы секретаре иптәш Никулин. — Ҡала комитетендә бик күп төрлө кәңәшмәләр, ултырыштар үткәрелә, ләкин конкрет бер нәмә лә эшләнмәй. Беҙҙең заводтың эшендә киҙе-мамыҡ комбинатының эшенә оҡшаған бер нәмә лә юҡ, ләкин тау оборудованиелары заводы менән оҡшашлы эш бик күп. Бына ошондай бер төрҙәрәк эш алып барған завод партия ойошмалары менән тәжрибә уртаҡлашыу кәңәшмәләре үткәрелмәй. Минеңсә, ҡала комитетенең промышленность бүлеге ҡалала булған бөтә яңылыҡты, прогрессивлекте таратыуҙың боевой штабы булырға тейеш.

— Партия конференцияһының ҡарарын ҡулланып, — тине ҡала Советы башҡарма комитете председателе иптәш **Капустин**, — коммуналь предприятиеларҙың эшен ныҡытыуға, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эштәрен яҡшыртыуға, торлаҡ төҙөлөшөнә ҡала Советы исполкомы үҙенең төп иғтибарын юналтте. Түбәнге партия ойошмаларының актив ярҙамында, ҡала халҡын культура һәм көн-күреш яғынан хеҙмәтләндереүҙә бер ни тиклем яҡшыртыуға мөмкинлек биргән байтаҡ практик саралар үткәрелде.

Шулай ҙа ҡала Советының эшендә бик серьез етешһеҙлектәр бар әле. Үткән йылда ҡала өсөн ебәрелгән аҡса бары тик 80 процентҡа ғына файҙаланылды. Кинотеатрҙар төҙөү эше бик аҡрын бара.

Трамвай һәм автобустар бик насар эшләтелә, сауҙа ойошмалары үҙҙәренең бурыстарын тулыһынса үтәй алмайҙар, ҡалала санитария тәртибе урынлаштырыудың еткәне юҡ. Беҙҙең эшебеҙҙәге бөтә был етешһеҙлектәр бик урынлы тәнҡит ителделәр.

Иптәш Капустин унан ары торлаҡ төҙөлөшө менән һәм торлаҡ йорттары территорияларын төҙөкләндереү менән насар шөғөлләнеүсе «Баштройтрест» һәм Өфө тимер юлы етәкселәре Конкин һәм Козенко иптәштәрҙе тәнҡитләне.

Һуҙ БАССР Министрҙар Советы председателе иптәш **Уразбаевҡа** бирелде. Иптәш Уразбаев үҙ телмәренең башында һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡ осоронда совет кешеләренең өлгәшкән уңыштары тураһында, хеҙмәтсәндәрҙең көн-күреше яҡшырыуы тураһында, ҡалаларҙың үҫеүенә һәм төҙөкләнеүенә туҡталды.

— Партия һәм хөкүмәттең [illegible] һәтеүҙәре арҡаһында, — тине Уразбаев, — Башҡортостандың промышленность үҙәктәре [illegible] лаләр, капитал һалыу йылы[illegible] Өфө ҡалаһын төҙөкләндереү [illegible] йорттары һалыу өсөн тик бер [illegible] ла ғына 60 миллион һум [illegible] Үткән йылғы һәм быйылғы [illegible] ренсе кварталында дөйөм [illegible] мең квадрат метр майҙанда [illegible] тары һәм 39 индивидуаль [illegible] эксплуатацияға индерелде. [illegible] ҙәү һәм ҡала транспортының [illegible] ыртыу буйынса байтаҡ сара[illegible] релде.

Шулай ҙа, булған мөмкинле[illegible] резервтар менән сағыштырға[illegible] был ыңғай эштәребеҙ етерлек [illegible] бик алыҫ тора әле. Сығыш яһа[illegible] таштар ҡала хужалығына, тор[illegible] лөшөнә һәм ҡаланы төҙөкләнде[illegible] етәкселек итеүҙәге етешһеҙлектәр [illegible] талар өсөн партияның ҡала [illegible] һәм ҡала Советы исполкомын [illegible] лы тәнҡитләнеләр.

Ҡала предприятиеларына ебәр[illegible] саны йылдан-йыл, систематик [illegible] файҙаланып етмәүҙәре ҡаланы [illegible] дереү, һәм торлаҡ йорттары һалы[illegible] да төп етешһеҙлектәрҙең береһе [illegible] тора. Партияның ҡала комитет[illegible] ла Советының башҡарма комите[illegible] лыҡ ойошмаларынан торлаҡ [illegible] ебәрелгән аҡсаларҙы тейешенсә [illegible] ныуҙы талап итмәйҙәр. Ҡала С[illegible] башҡарма комитете халҡты [illegible] ҙәкләндереү эшенә бик насар [illegible]

Урындағы Советтар торлаҡ [illegible] һаҡлау тураһында бик йомшаҡ [illegible] лек итәләр. Билдәле булғанынса, [illegible] сәндәрҙең инициативаһы буйынса [illegible] тар Союзының бөтә ҡалаларында [illegible] лаҡ фондын социалистик һаҡла[illegible] өсөн көрәш йәйелдерелде. Өфө ҡа[illegible] район Советтары был өлкәлә бер [illegible] эшләмәйҙәр, хатта халҡтың [illegible] ваһын да яҡламайҙар.

Иптәш Уразбаев партия ойо[illegible] ның етәкселәрен торлаҡ төҙөлө[illegible] ҡаланы төҙөкләндереүҙә урындағы [illegible] тарға күберәк ярҙам күрһәтерг[illegible]

Дим станцияһының паровоз[illegible] партия ойошмаһы секретаре ипт[illegible] **талев** бишйөҙсөләр хәрәкәтен [illegible] менән бик йомшаҡ шөғөлләнгәр[illegible] Өфө тимер юлының етәкселәрен, [illegible] бүлекте һәм ВКП(б)-ның ҡала [illegible] тәнҡитләне.

— Был турала һүҙ бик күп, — [illegible] ул, — ә эш юҡ. ВКП(б)-ның ҡа[illegible] тете бишйөҙсөләр хәрәкәте [illegible] тураһында ҡарар сығарҙы, [illegible] тормошҡа ашырылыуын контрол[illegible] май.

ВКП(б)-ның ҡала комитете [illegible] иптәш **Соловьева** үҙенең сығышын[illegible] тын-ҡыҙҙарҙы етәкселек итеү [illegible] ләтеүгә етерлек иғтибар бирелмә[illegible] ләп үтте. Партияның түбәнге о[illegible] ры һәм район комитеттары, — [illegible] был мөһим эш менән бик йомшаҡ [illegible] ғәлләнәләр.

Киҙе-мамыҡ комбинаты фаб[illegible] председателе иптәш **Семеницева**, [illegible] ция органдары хулиганлыҡҡа [illegible] етерлек көрәшмәйҙәр, тине. Ул [illegible] ҙың төнгө эшен сәғәт икеләр[illegible] дауам иттерергә кәрәк, сөнки [illegible] күп кенә предприятиеларҙа [illegible] алмашына, тигән тәҡдим индерҙе.

Иптәш Семеницева, унан һуң, [illegible] союз ойошмаларына етәкселек [illegible] партия ҡала комитетенең эшендә[illegible] һеҙлектәргә киң рәүештә [illegible] Ҡала комитете, — тине ул, — [illegible] союздарҙың түбәнге ойошмаларын [illegible] рылғап, уларға оператив һәм [illegible] етәкселек итмәй. Эшселәрҙең [illegible] йыйылыштарында, производство [illegible] ләрендә бик күп ыңғай тәжрибә[illegible] етешһеҙлектәрҙе белергә мөмкин[illegible] ҡала комитетенең работниктәре [illegible] йыйылыштарҙа булмайҙар. Хатта [illegible] профсоюз ойошмаһының отчет-һайлау [illegible] йылышында ла ҡала комитетен[illegible] булманы.

Иптәш Мостафиндең һәм ревизия комиссияһы председателе иптәш [illegible] тың отчет докладтары буйынса [illegible] алышыуҙарҙа шулай уҡ тау об[illegible] ниелары заводы директоры [illegible] Башҡорт опера һәм балет театры [illegible] ойошмаһының секретаре **Нуда**[illegible] прокуроры вазифаларын үтәүсе [illegible] ДОСФЛОТ партия ойошмаһы [illegible] **Зазуля**, цемент заводы директоры [illegible] **ман** иптәштәр һөйләнеләр.

Ҡала конференцияһында ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитете [illegible] иптәш **Ваһапов** ҙур телмәр менән [illegible] яһаны.

Иптәш Мостафиндең йомғаҡ[illegible] ҙенән һуң конференция ҡала [illegible] ойошмаһында бөтә партия-ойоштороу, партия-политик эштәрҙе [illegible] юналтелгән киң ҡарар ҡабул итте.

Конференцияла ҡатнашыу[illegible] оҙаҡҡа һуҙылған ҡул сабыуҙар [illegible] ла, кешелек гениһе, бөйөк юлбашсы иптәш Сталинға хат ҡабул итте.

Конференция ВКП(б) ҡала [illegible] пен һәм уның ревизия комиссияһы [illegible] яңы составтарын һайланы.

ДҮРТЕНСЕ БИШ ЙЫЛЛЫҠ ЙОМҒАҠТАРЫ ЯҢЫ ЕҢЕҮҘӘРГӘ РУХЛАНДЫРА

Сталинсе хәстәрлеккә яуап

Өфө нефть эшкәртеү заводының цехтарында һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ пландың үтәлеше тураһында белдереүгә бағышланған митингылар һәм йыйылыштар үтте.

Начальнигы иптәш Закиров булған цех коллективы бөйөк еңеүҙәрҙең йомғаҡтарын ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алды. Митингыла цех начальнигы иптәш Закиров сығыш яһаны. Ул биш йыллыҡта цех коллективы тарафынан өлгәшелгән уңыштар тураһында һөйләне.

Слесарҙар бригадаһы бригадиры иптәш Карымов митингыла сығыш яһап былай тине:

— Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ эсендә совет кешеләренең тормош шарттары яҡшырҙы. Кешеләр тураһында хәстәрлек артты. Минең, Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтҡас, бер төрлө лә квалификацияң юҡ ине. Заводҡа эшкә индем. Эшләнем дә, уҡыным да. Һөҙөмтәлә слесарь булдым. Хәҙер слесарҙар бригадаһы менән етәкселек итәм. Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына хаҡтарҙың арзанайтылыуы минең көнкүреш шарттарымды өс-дүрт тапҡырға яҡшыртты. Бөйөк еңеүҙәр хөрмәтенә һәм сталинсе хәстәрлеккә яуап итеп, мин хеҙмәттә яңы еңеүҙәргә өлгәшергә һүҙ бирәм. Үҙ бригадам менән айлыҡ планды 160 процентҡа үтәргә йөкләмә алам.

Установка механигы иптәш Дворцов биш йыллыҡ пландың уңышлы үтәлеүен Черниковск ҡалаһындағы миҫалдарҙа күрһәтеп һөйләне.

— Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ эсендә ҡалабыҙҙа беренсе класлы «Победа» кинотеатры, пионерҙар йорто, мәктәптәр, дауалау һәм культура учреждениелары төҙөлдө. Улар партия һәм хөкүмәтебеҙҙең хеҙмәтсәндәр тураһындағы хәстәрлеге булып торалар. Биш йыллыҡ планды үтәүҙә ҡатнашыуым менән мин законлы ғорурланам. Беҙ хәҙер яңы еңеүҙәргә өлгәшергә тейешбеҙ, — тине ул.

Митингыла цех операторы иптәш Тюрин үҙ бригадаһы менән Май алды йөкләмәһенән тыш апрель айында экономия күрһәткестәрен 5 мең һумға арттырырға һүҙ бирҙе.

М. Мостафин.

Хеҙмәт күтәрелеше

Биш йыллыҡтың срогынан алда үтәлеше тураһындағы белдереү беҙҙең фабриканың коллективы өсөн ҙур шатлыҡ булды. Уҙғарылған митингыла стахановка иптәш Ғәрәева биш йыллыҡ осоронда производствоның яңы техника менән байыҡтырылыуы тураһында һөйләп былай тине:

— Беҙҙең хеҙмәтебеҙ көндән-көн ҡаҙаныла һәм хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫтерелә бара. Сөнки беҙ һуңғы биш йыл эсендә бик күп оборудованиелар алдыҡ. Мин элек смена һайын 8 мең метр йылыҡ еттәр һуҙа инем. Ә хәҙер, яңы машина алғас, сменаға 60 мең метр буйын еп һуҙыуға өлгәшәм. Партияның ҡайғыртыуына яуап итеп, тағы ла яҡшыраҡ эшләргә һүҙ бирәм.

Туҡыусы Нураева, мастер ярҙамсыһы Дуванкина иптәштәр биш йыллыҡ план эсендә үҙҙәренең профессияларын күтәреүҙә өлгәшкәнлектәрен һөйләнеләр. Ә Брючков, Калашкова, Кәлимуллина һәм Байцев иптәштәр коллективты Май алды ярышында тағы ла яҡшыраҡ күрһәткестәргә өлгәшергә саҡырҙылар.

Бындай уңыштар беҙҙең фабрика һәм комбинат өсөн осраҡлы хәл түгел. Уларҙың бөтәһе лә тәбиғи. Сөнки коллектив социалистик ярыш нигеҙендә эшләп, яңынан-яңы производство күрһәткестәренә өлгәшә. Беҙ, Май алды ярышында ла кнжә-мамыҡ комбинаты предприятиелары араһында алдынғылар сафында барабыҙ.

Фабрика коллективы Май алды социалистик ярышын киң йәйелдереп, 23 апрелдә 4 айлыҡ производство программаһын срогынан алда үтәне. Тик март айында ғына 5 тонна урынына 5,5 тонна мамыҡ сырьеһы экономияланды. Был беҙҙең фабрика коллективының биш йыллыҡ пландың уңышлы үтәлеүенә һәм Май байрамына ҙур бүләге булып тора.

Беҙ, хәҙер апрель аҙағына тиклем 55 тонна иләнгән еп етештереү өсөн яңы йөкләмә алдыҡ. Был ептән 310 мең метр туҡыма етештерергә мөмкин. Беҙҙең коллектив менән бер рәттән, комбинаттың башҡа коллективтары ла был көндәрҙә юғары уңыштарға өлгәшәләр.

С. Моталов,

Өфө кнжә-мамыҡ комбинатының еп иләү фабрикаһы мәдире.

Һөйөклө Сталинға рәхмәт

Октябрьский ҡалаһы нефтселәре СССР Государство План Комитетының һәм Үҙәк Статистика Управлениеһының Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың үтәлеш йомғаҡтары тураһындағы белдереүен ҙур ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршы алдылар.

Беренсе номерлы бораулау контораһында уҙғарылған йыйылышта атаҡлы бораулау мастеры иптәш Алексеев нефтселәрҙең дөйөм фекерен белдерҙе:

— Америка-Англия империалистары тағы ла бөтә донъя һуғышынан һуң үҙ экономикаларын һуғыш рельстарына баҫтырҙылар. Эшселәр, крәҫтиәндәр аслыҡҡа дусар ителделәр. Была ошо ваҡытта, башында иптәш Сталин торған Совет хөкүмәте, тыныс төҙөлөш планын ҡабул итеп, халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙы һәм үҫтереүҙе ойошторҙо.

Һуғыштан һуңғы осорҙағы был пландың да ижадсыһы иптәш Сталин булды. Шуға күрә лә беҙ, совет кешеләре, уны сталинсе биш йыллыҡ тип атаныҡ. Ҡайҙа Сталин — унда еңеү. Биш йыллыҡ планды беҙ бөтә күрһәткестәр буйынса ла үтәнек. Ул сталинсе тыныслыҡ политикаһын тормошҡа ашырыу өсөн ҙур вклад булды.

Беҙҙең һөйөклө илебеҙҙең ҡеүәте тағы ла артты. Была шуға күрә лә беҙ, нефтселәр, биш йыллыҡ пландың ижадсыһы иптәш Сталинға ысын күңелдән рәхмәт әйтәбеҙ.

Бораулаусылар коллективы, быға яуап итеп, был йыйылышта үҙенә күтәренке йөкләмә алды.

Ю. Әхмәдиев.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

СЫНТАШТАМАҠ МТС-ы МЕХАНИЗАТОРҘАРЫНЫҢ ҠИММӘТЛЕ БАШЛАНҒЫСЫН—БӨТӘ ТРАКТОР БРИГАДАЛАРЫНА!

Тракторист Ғәзизовтың ҡиммәтле инициативаһы

Сынташтамаҡ МТС-ы директорының һәм партия ойошмаһының инициативаһы менән «Яңы ил» колхозын хеҙмәтләндереүсе иптәш Елаев етәкселек иткән бригадала трактор агрегаттарының [illegible] сәғәт графигы буйынса эшләүе ойошторолдо.

Тракторист иптәш Ғәзизов МТС-тың бөтә трактор бригадаларына, [illegible] участка механиктарына һәм агрономдарына мөрәжәғәт итте. [illegible] 13 сәғәт эсендә 85 гектар майҙанда ашлыҡ сәсте, 73 килограмм ягыулыҡта экономия яһаны. [illegible]

Сәғәт графигы [illegible]

Сәғәт графигын ҡулланыу буйынса [illegible] Мәҫәлән, тракторист Кап, Сайфуллов, Ғәзизов [illegible] СТЗ—НАТИ, ДТ—54 тракторҙарында сменаһына 60—70-әр гектар, [illegible] 35 — 40-ар гектар майҙан сәсә. [illegible] тракторист иптәш Саубанов СТЗ — НАТИ тракторында сменала 11 гектар ер һөрҙө.

Тракторист иптәш Ғәзизовтың башланғысын Языков МТС-ының тракторисы [illegible] иптәш Бунафин С — 80 тракторында 165 гектар урынына 203 гектар майҙанда [illegible] Рыженко СТЗ — НАТИ тракторында 73,2 гектар майҙанда ашлыҡ сәсеп, 120 килограмм ягыулыҡта экономия яһаны.

Киров исемендәге колхоз председателе иптәш Вахитов ВКП(б) райкомы пленумында [illegible] Башҡорт агрегатында сәғәт графигы менән эшләүҙе ойошторҙо. Был агрегат 11 сәғәт эсендә СТЗ — НАТИ тракторында [illegible] 64 гектар майҙанда ашлыҡ сәсте.

Район МТС-тарында [illegible] МТС, колхоз етәкселәре һәм урындағы партия, комсомол ойошмалары [illegible] ярҙам итергә тейештәр.

В. Комаров,

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы министры урынбаҫары.

Беҙ сәғәт графигы буйынса нисек эшләйбеҙ

Сынташтамаҡ МТС-ының башҡа механизаторҙары кеүек үк, быйыл мин дә Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеев өлгәһендә эшләргә ҡарар иттем. Үҙем эшләй торған 51-се номерлы СТЗ — НАТИ тракторын социалистик һаҡлыҡҡа алдым, техниканы тулыһынса файҙаланырға, трактор эшенең үҙенә төшөү хаҡын кәметергә, резервтарҙы файҙаланыуҙы ойошторорға, колхоз баҫыуҙарында юғары уроҗай үҫтереүҙе тәьмин итергә һүҙ бирҙем.

Социалистик йөкләмәне үтәүҙә сәғәт графигы буйынса эшләүҙе ойоштороу ҙур урын тота. Был, шулай уҡ яҙғы сәсеүҙе агротехник сроктарҙа үткәреүҙе тәьмин итәсәк. Мин ошо прогрессив методты баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк ҡулланыуҙы ойошторҙом.

Бының өсөн алдан бөтә саралар күрелде. Ҡышҡы осорҙа трактор һәм тағылма инвентарҙар яҡшы сифатлы итеп ремонтланды. Техник тәрбиәләү эштәре үткәрелде. Колхоз баҫыусыларының үҙенсәлектәре өйрәнелде. Агрегат эшләй торған майҙан 2 баҫыуҙан тора. Ул бик үк тигеҙ түгел. Уртаһында соҡорлоҡтар бар, ә ике яҡ ситте тауға күтәрелә. Мин тауҙан түбәнгә юғары тиҙлектә, үрләгәндә икенсе һәм өсөнсө тиҙлектә йөрөргә кәрәклеген билдәләнем.

Минең сәғәт графигы буйынса эшләүемдең тәүге көнө МТС-тағы бөтә механизаторҙар өсөн махсус курс булып торҙо.

Мин «Яңы ил» колхозы баҫыуында сәғәт графигы буйынса эшләүҙең тәүге көнөндә, 13 сәғәт ваҡыт эсендә 85 гектар майҙанда ашлыҡ сәстем һәм 73 килограмм ягыулыҡта экономия яһаным.

Ә икенсе, өсөнсө һәм башҡа көндәрҙә минең агрегат смена һайын даими рәүештә 65 — 79-ар гектар майҙанда ашлыҡ сәсте. Беҙ, тракторҙарҙың эшләп сығарыуын көндән-көн арттыра барабыҙ. Беҙҙең бригада хәҙер 657 гектар майҙанда ашлыҡ сәсте.

Яҙма график түбәндәгеса планлаштырылды. Загондың оҙонлоғо 1012 метр. Трактор 3 сәскес агрегаты менән 10,8 метр киңлекте ала. Өсөнсө тиҙлектә йөрөгәндә 26 минут эсендә загонды бер тапҡыр әйләнә һәм 2,18 гектар майҙан сәсеңә. Тимәк, сәғәтенә 5 гектар, ә 10 сәғәттә 50 гектар майҙанда ашлыҡ сәсеңә.

Ваҡыт талабы түбәндәгеса булды. Загондың һәр ике яғына табан 2024 метр аралыҡты агрегат өсөнсө тиҙлек йөрөш менән, йәғни сәғәтенә 5,2 километр йәки минутына 86 метр йөрөш менән, 23,5 минут ваҡытта үтте. Загондың бер башында боролоуға 1-1,5 минут, ә ике башында боролоуға 2-3 минут ваҡыт китте. Ә загонды әйләнеп сығыуға 26 минут билдәләнгәйне. Бында шулай уҡ сәсеүҙә сәғәтенә 6,5 центнер орлоҡ талап ителеүе, орлоҡто 4-5 сантиметр тәрәнлектә күмдереү кәрәклеге, һыу, яғыулыҡ һәм майлау заправкалары өсөн бер сәғәт ваҡыт китеүе, смена эшен иртәнге 7 сәғәттә башлау һәм кис 18 сәғәттә тамамлау һәм башҡалар тулы иҫәпкә алындылар.

Ошо иҫәптәрҙән сығып, минең сәғәт графиге тапшырылды. Унда смена заданиеһе түбәндәгеса күрһәтелде: 7 сәғәт 26 минут — беренсе круг — 2,18 гектар, 7 сәғәт 52 минут — 2-се круг — 4,36 гектар сәсергә. Шулай итеп, һәр бер минут һайын круг юлын үтеү һәм, шуның менән, сәсеү майҙаны билдәләү үткәрелде. Смена аҙағына, йәғни 18 сәғәттә 23-сө кругты яһау һәм 50 гектар сәсеү билдәләнде.

Заданиене үтәү өсөн агрегат һәм уны хеҙмәтләндереүселәр үҙ урындарын алдылар. Орлоҡ ташыу өсөн аттар һәм кешеләр беркетелде. Сәскестәргә 6 кеше ҡуйылды. Уларҙың өсөһө сменалап орлоҡ һалып торорға тейештәр ине. Трактор һәр бер сәғәтлек эштән һуң майлау менән һәм сменаға бер тапҡыр һыу менән заправка яһалырға тейешлеге билдәләнде. СД—24 маркалы 3 сәскес, һәм бер үк ваҡытта сәскестәргә икешәр ҡатоҡ тағылды.

Ошондай әҙерлек менән беҙ 20 апрелдә иртәнге 7 сәғәттә сәғәт графигы буйынса эшләүҙе башлап ебәрҙек.

Эш барышында ҡайһы бер үҙгәрештәр ҙә булды. Сәскестәргә загондың һәр ике башында орлоҡ тултырыу билдәләнгәйне. Беҙ уны тик бер яҡ башта ғына башҡарыуға күстек. Был хеҙмәтләндереүсе кешеләр һанын ҡыҫҡартты һәм агрегаттың тик тороу ваҡытына экономия яһаны. Шулай уҡ баҫыуҙа рельефте файҙалана белеү яҡшырҙы, һөҙөмтәлә загондың ике яҡ юнәлешенә табан да трактор тулы тиҙлектә йөрөтөлдө. Был 4-5 минут ваҡытҡа экономия бирҙе һәм сәғәтенә 6,5 — 6,8 гектар майҙанда ашлыҡ сәсергә мөмкинлек тыуҙы. Эш ошо рәүештә барҙы. Техник сәбәптәр менән буш тороу булманы. Яғыулыҡ менән заправка тик 15 минут ваҡытта үткәрелде, ә уға, ғәҙәттә, 60 минут ваҡыт китә ине. Заправка механизациялаштырылған ысулда үткәрелде. Шул уҡ ваҡытта тракторға һыу һалынды, тағылма инвентарҙарҙың төҙәклектәре тикшерелде. Тағылма инвентарҙарҙы төҙәтеү өсөн үткәрелгән ваҡыт сменаға 45 минут тәшкил итте. Эш ваҡытында сәскес сынйыры бер тапҡыр, ә сәскес аппарат сынйыры ике тапҡыр өҙөлдө. Быларҙы төҙәтеү өсөн 25 минут ваҡыт бирелде. Ләкин, юғарыла әйтелгәнсә, башҡа эш тармаҡтарында ваҡытҡа күп экономия яһалды.

Беҙҙең тәүге эш көнө йомғаҡтары бына ошондай. Был көн сменаға беҙ 50 гектар урынына 85 гектар һоло сәстек. Был тракторҙы һәм тағылма машиналарҙы тулы ҡеүәтендә эшләтеү мөмкинлеген күрһәтте. Бында шулай уҡ эште иртәнге 5 сәғәттә башлау кәрәклеген иҫкә алғанда, сменаға тағы ла күберәк сәсергә мөмкин буласаҡ. Шулай итеп, сәсеү срогын 1,5—2 тапҡырға ҡыҫҡартырға мөмкин.

Бөтә был мөмкинлектәрҙе беҙ тулыһынса файҙаланабыҙ. Сәғәт графигы буйынса эшләүҙә хәҙер беҙ яңынан-яңы уңыштар өсөн көрәшәбеҙ.

И. Ғәзизов,

Благовар районы, Сынташтамаҡ МТС-ының 9-сы номерлы трактор бригадаһы тракторисы.

Трактор һәм баҫыусылыҡ бригадалары дуҫлыҡта эшләйҙәр

Беҙҙең «Яңы ил» колхозын Сынташтамаҡ МТС-ы хеҙмәтләндерә. Баҫыуҙарыбыҙҙа иптәш Елаев етәкселек иткән трактор бригадаһы эшләй.

Беҙ, трактор бригадаһын хеҙмәтләндереүгә ҙур иғтибар бирәбеҙ. Быйыл ла бригада тракторҙары килгәнгә тиклем үк беҙ бөтә әҙерлекте башҡарҙыҡ. Трактористар эшкә башлауҙан күп алда баҫыусылыҡ бригадаһы һәм уңдағы эш шарттары менән яҡшылап таныштылар.

Беренсе номерлы баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры иптәш Нурый Сөләймәнов трактористар өсөн бөтә шарттарҙы тыуҙырҙы. Трактор бригадаһын хеҙмәтләндереү өсөн тәжрибәле колхозсылар беркетелде. Сәскестәр һәм культиваторҙар яҡшылап ремонтланды һәм майланды. Трактористар прицепщиктарҙы яңы метод менән эшләүгә өйрәттеләр, ә прицепщиктар механизаторҙарға тупраҡтың үҙенсәлектәре тураһында һөйләнеләр.

Иптәш Сөләймәнов бригадаһы участкаһында тракторист иптәш Ғәзизов сәғәт графигы буйынса эш башларға тейеш ине. Иптәш Сөләймәнов был тракторисҡа тотҡарлыҡһыҙ эшләү өсөн бөтә шарттарҙы тыуҙырҙы. Һыу һәм орлоҡ ташыусылар үҙ-ара ярышҡа сыҡтылар. Был агрегаттың сәғәт графигы буйынса уңышлы эшләүен тәьмин итте.

Беҙ, трактор бригадаһын тағы ла яҡшыраҡ хеҙмәтләндереү өсөн бөтә сараларҙы күрәбеҙ. Сәғәт графигы буйынса эш башланған көндәрҙән бирле машиналарҙың эшһеҙ тороу ваҡиғаһы булғаны юҡ.

Көн һайын сменанан һуң учетчик, баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры менән берлектә, трактористар тарафынан эшкәртелгән майҙанды үлсәй, тикшерә һәм ҡабул итә. Эш сифаты яҡшы һәм отличнолы итеп табылды. Баҫыу эштәренең яҡшы сифатлы итеп башҡарылыуы юғары уроҗай алыуҙы тәьмин итәсәк.

Трактор эше ваҡытында агрегат янында колхоз правлениеһы члендарының, йәки председателдең йәки уның урынбаҫарының булыуы айырыуса әһәмиәтле. Беҙ ошондай дежурство урынлаштырҙыҡ. Был трактор агрегатында хеҙмәт ойоштороуҙы яҡшыртыуға, эш сифатын күтәреүгә ярҙам итә.

МТС-тың сәғәт графигы буйынса эшләүҙе иң тәү беҙҙең колхозда ойоштороуына беҙ бик шатбыҙ. Был беҙҙең колхозда яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа сроктарҙа үтәүҙе тәьмин итә.

Колхозыбыҙҙың баҫыусылыҡ бригадалары трактор бригадаларын хеҙмәтләндереүҙе элгәре ойоштороу менән бергә, баҫыу эштәрендә йәйлә тартыу көстәрен файҙаланыуға ла сериоз иғтибар бирәләр. Был эштәрҙә лә нормаларҙың арттырып үтәлеүе өсөн көрәш бара.

Беҙҙә яҙғы сәсеү ҡыҙыу темп менән дауам итә. Эштең сифаты ла яҡшы. Көн һайын ошо темп менән эшләгәндә, беҙ иртә культуралар сәсеү планын 29 апрелгә тулыһынса тамамлаясаҡбыҙ. Бының өсөн беҙ көн һайын ырамлыраҡ эшләргә тырышабыҙ. Сәсеү сроктарын ҡыҫҡартыу уроҗай алыу кимәлен арттырасаҡ.

Н. Фәрхетдинов,

Благовар районы, «Яңы ил» колхозы председателе.

Социалистик ярыштың ҡеүәтле көсө

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы капиталистик ҡоллоҡтан азат иткән хеҙмәтсәндәрҙең ғәйәт күп массаһының ижади эшмәкәрлектә үҫеше өсөн ғәләмәтлеккә мөмкинлектәр асты. Капитализм малендә иҙелгән һәм һәр төрлө политик тәржештән ситләтелгән миллионлаған кешеләрҙе большевиктар партияһы, Совет власы яңы общество төҙөүҙә актив ҡатнашыуға күтәрҙеләр.

Совет государствоһында хеҙмәтсәндәр кешелек тарихында беренсе булып эксплуататорҙарға түгел, ә үҙҙәренә эшләй башланылар. Социалистик төҙөлөш барышында кешенең акрынлап яңы мораль сифатлар барлыҡҡа килде, бындай кеше өсөн государствоның интерестары бөтә нәмәнән юғары. Беҙҙең кешеләребеҙҙә хеҙмәткә, ҙур общественный әһәмиәте булған хеҙмәткә яңы мөнәсәбәт барлыҡҡа килде.

Бөйөк юлбашсылар В. И. Ленин һәм И. В. Сталин социалистик ярышты үҫтереүгә айырыуса ҙур әһәмиәт бирҙеләр.

Бөйөк Октябрь революцияһы еңгәндән һуң уҡ яҙылған *«Ярышты нисек ойошторорғаң»* тигән мәҡәләлә В. И. Ленин социализм ярышты ысын-ысындан киң һәм массовый күләмдә ҡулланырға беренсе булып мөмкинлек тыуҙырҙы, тип күрһәтте.

«Хәҙер, социалистик хөкүмәт власть башында булған ваҡытта, беҙҙең бурысыбыҙ — социалистик ярышты ойоштороу», — тип яҙҙы В. И. Ленин.

Иптәш Сталин социалистик ярыш тураһында Ленин идеяларын үҫтерҙе һәм юғары баҫҡысҡа күтәрҙе. Бөйөк юлбашсы: «... ярыш — хеҙмәтсәндәрҙең миллионлаған массаларының максималь **активлығы нигеҙендә социализм төҙөүҙең коммунистик методы ул»,** ул«... Миллионлаған хеҙмәтсәндәрҙең ижади инициативаһына таяныусы массаларҙың эшлекле революцион **үҙ-үҙендә тәнҡит итеүс»** (И. В. Сталин, Әҫәрҙәр, 12-се том, 109—110-сы биттәр) булып тора тип күрһәтә.

Бынан егерме ике йыл элек, 1929 йылдың 29 апрелендә, партияның XVI Бөтә Союз конференцияһы беренсе биш йыллыҡ планды раҫлап, сталинсе биш йыллыҡты уңышлы үтәү өсөн социалистик ярышты бөтә яҡлап йәйелдереү тураһында Советтар Союзының бөтә эшселәр синыфына һәм хеҙмәтсән крәҫтиәндәренә мөрәжәғәт ҡабул итте.

Большевистик партияның саҡырыуы халыҡ массаларында ҡайнар отклик тапты. Хеҙмәтсәндәр өҫтәмә пландар алып, производство заданиеларын арттырып үтәп, индустриаль гиганттарҙы тиҙерәк төҙөү өсөн, социалистик төҙөлештең темптарын көсәйтеү өсөн көрәшкә бик ҙур рухланыу менән ҡушылдылар. Эшселәр менән бергә социалистик ярышта колхоз яғына боролған хеҙмәтсән крәҫтиәндәр ҙә актив ҡатнашлыҡ иттеләр.

Беренсе биш йыллыҡ план срогынан алда, дүрт йылда өс айҙа үтәлде. 1933 йылдың ғинуарында ВКП(б) Үҙәк Комитетының һәм Үҙәк Контроль Комиссияһының *пленумында* иптәш Сталин, биш йыллыҡ планды уңышлы үтәүҙе тәьмин итеүсе төп көстәр тураһында һөйләгәндә, былай тип күрһәтте:

«Был, барыһынан да элек, социалистик ярышты һәм ударсылыҡты йәйелдереүҙә инженер-техник көстәр менән бергә бик ҙур энергия күрһәткән миллионлаған эшселәр һәм колхозсылар массаларының активлығы һәм үҙ-үҙен аямаусанлығы, энтузиазмы һәм инициативаһы» (И. В. Сталин, Ленинизм мәсьәләләре, 11-се баҫма, 420—421-се биттәр).

Икенсе биш йыллыҡ йылдарында хеҙмәтсәндәрҙең материаль кимәлен күтәреү, яңы техниканы киң индереү, техникаға эйә булған кадрҙарҙың үҫеүе нигеҙендә стахановсылар хәрәкәте барлыҡҡа килде һәм үҫте, стахановсылар хәрәкәте социалистик ярыштың яңы, юғары этабы булып тора.

Стахановсылар хәрәкәтенең башында торған иптәш Сталин, уның бөйөк әһәмиәтен асып бирҙе, «... Ул беҙгә шундай юлды аса, тик шул юл менән барғанда ғына хеҙмәт етештереүсәнлегенең, социализмдан коммунизмға күсеү өсөн һәм аҡыл хеҙмәте менән физик хеҙмәт араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡты бөтөрөү өсөн кәрәк булған юғары күрһәткестәренә ирешергә мөмкин» (Шунда уҡ, 525-се бит).

Большевиктар партияһының бик ҙур ойоштороу эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә социалистик ярыш һәм уның юғары формаһы булған стахановсылар хәрәкәте бик ныҡ үҫте. Халыҡ массаларының ҡеүәтле хеҙмәт күтәрелеше беҙҙең Тыуған илебеҙҙе үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе программаһын уңышлы үтәүҙең, уны ҡеүәтле социалистик индустриаль-колхоз державаһына әйерелдереүҙең иң мөһим шарттарының береһе булып торҙо.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында эшселәр, крәҫтиәндәр һәм интеллигенция социалистик ярыш һәм стахановсылар хәрәкәте нигеҙендә дошманды еңеү өсөн илде һәм фронтты бөтә кәрәк булған нәмә менән өҙлөкһөҙ тәьмин иттеләр.

Һуғыштан һуңғы осорҙа Совет государствоһы үҫешенең хәрәкәт иттереүсе көсө булған социалистик ярыштың ижади роле яңы көс менән күренде.

Иптәш Сталин тарафынан күрһәтеп бирелгән коммунистик төҙөлештең бик бөйөк программаһы совет кешеләрен бығаса күрелмәгән хеҙмәт батырлыҡтарына рухландырҙы. Большевиктар партияһы етәкселегендә хеҙмәтсәндәр һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ план заданиеларын уңышлы үтәнеләр. Ҡыҫҡа ғына тарихи срокта совет кешеләренең фиҙакәр хеҙмәте һөҙөмтәһендә һуғыштың ауыр эҙемтәләре бөтөрөлөп кенә ҡалманы, бәлки Тыуған илебеҙҙең экономика һәм культураһының ертабан сәскә атыуына өлгәшелде. Хужалыҡтың бик мөһим тармаҡтары үҫештән һуғышҡа тиклемге кимәлен байтаҡ уҙып киттеләр. Советтар Союзы техник прогресс юлынан алға табан ҙур аҙым яһаны. Производствоның бөтә тармаҡтарына ла алдынғы ватан техникаһы киң индерелде. Промышленноста эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге һуғышҡа тиклемге кимәлде күпкә артып китте. Хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күреше тайпылышһыҙ үҫә.

Социалистик экономиканың бик ҙур уңыштары, илдең техник ҡеүәтенең үҫеүе сталинсе эпохаң гранитоз ҡоролмаларын—Волгала Куйбышев һәм Сталинград гидроэлектростанцияларын, Төп Төрөкмән канлын, Днепрҙа Каховка гидроэлектростанцияһын, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡырым каналдарын, пароходтар йөрөй торған Волга-Дон каналын ҡыҫҡа ғына тарихи срокта ғәмәлгә ашырыу өсөн шарттар тыуҙырҙылар.

Социалистик ярыш бөтә халыҡ хәрәкәте характерын алды. Уларҙа хәҙер эшселәрҙең, инженер-техник работниктарҙың һәм хеҙмәткәрҙәрҙең 90 процентынан артығы, миллионлаған колхозсылар, МТС һәм совхоз работниктары ҡатнаша. Массаларҙың ижади инициативаһы продукцияның юғары сифаты өсөн, сырье һәм материалдарға экономия яһау өсөн, оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү өсөн, пландан тыш накопление өсөн патриотик хәрәкәттә үҙенең ҡаҙаланышын тапты. Участкаларҙы, цехтарҙы, предприятиеларҙы стахановсы итеү өсөн хәрәкәт кеүек ярыш формаһы ҙур әһәмиәткә эйә булып тора.

Уҙған йыл инженер-новатор Федор Ковалевтың ҡиммәтле башланғысы ныҡ таралды. Инженер Ковалев Мытищинск «Пролетарская победа» йоҡа буҫтау фабрикаһында хеҙмәттең алдынғы стахановсы алымдарын өйрәнеүҙе һәм фәнни дөйөмләштереүҙе һәм уларҙы бөтә эшселәр араһында таратыуҙы ойошторҙо. Был хәрәкәттә социалистик ярыштың иң мөһим сталинсе принциптарының береһе — дөйөм күтәрелешкә өлгәшеү өсөн алдынғыларҙың артҡа ҡалыусыларға ярҙам итеүе принцибы ҡаҙаланған.

Һуңғы ваҡытта техниканы яҡшыраҡ файҙаланыу өсөн ярыш киң йәйелә, был хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә һәм производствоның бөтә тармаҡтарында продукцияның үҫеүенә ҙур мөмкинлектәр аса. Коммунизмдың бөйөк төҙөлештәре өсөн заказдарҙы срогынан алда үтәү өсөн көрәш ҙур ҡолас ала бара.

Большевиктар партияһы хеҙмәтсәндәрҙең культура-техник кимәлен күтәреү тураһында, бөтә эшселәрҙе һәм бөтә крәҫтиәндәрҙе культуралы һәм белемле итеү тураһында арымай-талмай ҡайғырта. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында миллионлаған эшселәр үҙҙәренең квалификацияларын күтәрҙеләр. Күп меңләгән хеҙмәтсәндәр, уҡыуҙы производствола эшләү менән бергә алып барып, тамамланған урта һәм юғары специаль белем алдылар. Беҙҙең илебеҙҙә 17 миллион торал уҡыу институты һәм уҡыу йорттарының 450 миллион торал уҡыу бүлектәре бар. Уларҙа производствонан айырылмай торол 500 мең самаһы кеше уҡый. Беҙҙә бөтә эшселәре лә уҡыған заводтар һәм фабрикалар күбәйә баралар.

Эшселәр синыфы һәм крәҫтиәндәрҙең культура-техник кимәленең бик ныҡ күтәрелеүе, уларҙың социалистик аңлылығының үҫеүе ярыштың массовый булыуында, уның формаларының күп төрлө булыуында, производство новаторҙарының патриотик башланғыстарының тиҙ таралыуында һәм юғары йөҙөнтөлө булыуында күренә.

Беҙҙең илебеҙҙә новаторлыҡ фекеренең сәскә атыуы түбәндәге факт менән дә характерлана: һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың һуңғы ике йылында — 1949 һәм 1950 йылдарҙа тик промышленность предприятиеларында ғына беҙ миллион илле меңдән артыҡ уйлап табыу һәм рационализаторлыҡ тәҡдиме тормошҡа ашырылды.

Производство эше методтарын тамырынан камиллаштырған өсөн промышленность, транспорт һәм ауыл хужалығы стахановсыларының ҙур группаһына Сталин премиялары биреү техникаға эйә булған һәм уны алға ебәргән, халыҡ хужалығында яңылыҡ, прогрессивлыҡ өсөн көрәшеүсе беҙҙең кадрҙарыбыҙҙың бик ныҡ үҫешенең асыҡ дәлиле булып тора. Юғары наградаға өлгәшкәндәр араһында — инженер Федор Ковалев, бригадир Лидия Корабельникова, цех начальнигы Федор Кузнецов, слесарҙар Иван Корташев һәм Петр Зайченко, токарҙар Юрий Диков, Николай Чикирев, бораулау мастеры нефтсе Аға Нейматулла, малярҙар бригадиры Василий Скитев, ҡорос ҡойоусылар Владимир Захаров, Мөхәммәт Зинуров, Иван Семенов бар. Сталин премияларын производствоның төрлө тармаҡтарындағы башҡа күп стахановсылар ҙа алдылар.

Сталин премиялары лауреаттары араһында ауыл хужалығы новаторҙары, комбайнерҙар Константин Борин һәм Александр Асвкин, малсылыҡ фермаһы мөдирҙәре Прасковья Малинина, колхоз председателе Александра Евдокимова, молотилка машинисы Николай Бредюк, звено башлығы Хурмат Тишаева, мал ҡараусы Жубайкан Чикимбаев һәм башҡа иптәштәр бар.

Америка интервенттары Корелла тыныс ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы емергән, ҡарттарҙы, ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм балаларҙы үлтергән ваҡытта, империалистар Көнбайыш Германияла фашистик немец армияһын яңынан тыуҙырған ваҡытта, яңы агрессия акттары әҙерләп, империалистик лагерь көслә ҡоралланған ваҡытта беҙҙең илебеҙ хеҙмәтсәндәре социалистик ярыш байрағын — тыныслыҡ һәм хеҙмәт байрағын тағы ла юғарыраҡ күтәрәләр.

Социалистик ярыштың бөйөк көсө тураһында ленинсе-сталинсе идеяларҙың, СССР-ҙағы стахановсылар хәрәкәтенең бик ҙур тәжрибәһенең халыҡ-ара ҙур әһәмиәте бар. Улар халыҡ демократияһы илдәре хеҙмәтсәндәренә, бөйөк Ҡытай халҡына яңы тормош төҙөлөшөндә ярҙам итәләр.

Лениндең—Сталиндең еңелмәҫ байрағы аҫтында, большевиктар партияһы етәкселегендә коммунистик төҙөлештең һынала ған методы — социалистик ярышты ҡулланып, совет кешеләре алға, яңы хеҙмәт еңеүҙәренә баралар.

Н. Владимиров.

Газета подписчиктәренең законлы талабы

(Редакцияға килгән хаттарға күҙәтеү)

[illegible]

— Чапаев исемендәге колхоз Ҡырмыҫҡалы районы ...

[illegible]

Пакл былы хәбәрсе иптәш Ә. Исхаков ...

[illegible]

„Түңәрәк" колхозында урман полосалары

[illegible]

Ә. Әхтәмов.

Һал ағыҙыуҙа фиҙакәр хеҙмәт

[illegible] ... «Красная Башкирия», «Гудок», Ворошилов һәм Калинин исемендәге ауыл хужалығы артелдәре һал ағыҙыу эштәрен быйылғы навигацияла ойошҡанлыҡ менән башланылар. Калинин исемендәге колхоздың члендәре Хәкимьянова, Банапова һәм Хизбуллина иптәштәр көн һайын 14 урынына ... «Красная Башкирия» һәм «Гудок» колхоздарының һал ағыҙыусылары Ф. Зарипов, Д. Зәйнетдинов, С. Йосопов һәм Ҡ. Дусов иптәштәр ике тапҡыр 120-шәр кубометр ағас материалдарын Үҙән йылғаһы буйлап Ҡариҙел йылғаһына ағыҙҙылар.

Ш. Хәйруллин.

Институттың колхоз ауылына ярҙамы

[illegible]

А. Харисов.

Тыныслыҡҡа арналған кисә

[illegible] ... ҙыҡ сифатын күтәрергә, яҙғы экзамендәрҙә бары тик 4 һәм 5 билдәләренә тамамларға һүҙ бирҙеләр. Кисәлә элекке фронтовик, хәҙерге студент В. Даутов сығыш яһап, былай тине:

— Беҙ СССР Верховный Советының тыныслыҡты яҡлау тураһындағы Законын ысын күңелдән хуплайбыҙ. Беҙ уҡырға тейешбеҙ, ә быны өсөн тыныслыҡ иң мөһим шарт булып тора. Мин иптәштәрем бик күп кешеләре менән бергә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Сталинградтан Берлинға тиклем булған араны үттем һәм ике тапҡыр яраландым. Һуғыштың иң ауыр моменттарында ла ҡурҡыуҙы белмәнек һәм һуғышты еңеүле тамамланыҡ. Беҙҙең халҡтың бөтә эшмәкәрлеге тыныслыҡты һаҡлауға йүнәлтелгән.

Ә. Янупов.

Совхоздар өсөн төҙөлөш материалдары

Баймаҡ районындағы Һәүәнәк төҙөлөш комбинаты республикабыҙ совхоздары өсөн төҙөлөш материалдары әҙерләй. Ул өс тақта ярыу заводын һәм башҡа предприятиеларҙе берләштерә. Комбинат коллективы 5 айлыҡ планды 1 Майға, ә йыллыҡ планды 1 ноябргә үтәргә социалистик йөкләмә алғайны. Коллективтең һүҙе эштән айырылмай. Ул 1951 йылдың 1 квартал планын 140 процентҡа үтәне. Комбинатта үҙ заданиеһын үтәмәгән кеше юҡ. Леонтьев, Ибраһимов, Ғәмәров кеүек алдынғы стахановсылар заданиене 170—200 процентҡа үтәйҙәр.

Комбинат коллективы 1 Майға яңы таҡта ярыу заводын эксплуатацияға тапшырасаҡ.

К. Әхмәтьянов.

Яңы библиотека

Черниковск ҡалаһының Матросов клубы эргәһендә күптән түгел генә яңы библиотека асылды. Библиотека эшләй башлағандан алып ай ярым ваҡыт эсендә уның китап уҡыусылары һаны 600 кешенән дә артты.

Китап уҡыусыларҙа марксизм-ленинизм классиктәренең, рус әҙәбиәте классиктәренен һәм совет яҙыусылары әҫәрҙәренә һорау ҙур. Библиотека 15 дана төрлө газета һәм журналдар ала. Уның работниктәре иң яҡшы әҫәрҙәрҙе пропагандалауға ныҡ иғтибар итәләр. Күптән түгел генә «Беҙ иң өсөн яҙыусы Аркадий Гайдарҙы яратабыҙ» тигән темаға балалар менән бесеҙа үткәрелде.

Яҡын ваҡыт эсендә китап уҡыусылар конференцияһы буласаҡ.

Ғ. Кәбиров.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 25 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә 25 апрелдә Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

25 апрелдәге ултырышта СССР вәкиле А. Громыко көнбайыштағы өс держава вәкилдәренең үткән ултырышта яһаған сығыштарына яуап биреп, былай тине:

— Билдәле булыуынса, өс держава вәкилдәре ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса үҙҙәренең тоҡаллы формулировкаһын нығышмалы яҡлауҙы дауам иттерәләр һәм совет делегацияһы тарафынан тәҡдим ителгән формулировканы ҡабул итмәйҙәр. Беҙ өс держава вәкилдәре тарафынан үҙ формулировкаларын яҡлап, шулай уҡ был пункт буйынса совет формулировкаһын тәнҡитләү тәртибендә килтерелгән дәлилдәрҙең тулы нигеҙһеҙлеген бер нисә тапҡыр күрһәттек. Күрәһең, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыуға ҡағылған пункт буйынса өс держава позицияһының ныҡлы булмауын тойоп, Пароди ғөмүмән ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу идеяһын боҙоп күрһәтеү өсөн яңы метод ҡулланырға ҡарар иткән. Ул Советтар Союзында иғлан ителгән «Дипломатия тарихе» тигән күренекле хеҙмәттән тик өҙөк кенә килтерҙе.

Был китаптан Пароди тарафынан килтерелгән түбәндәге һөйләм ысынлап та бар: «Ҡоралһыҙландырылыу идеяһы күп быуаттарҙан бирле көтөлмәгәндә ошондай «тыныслыҡ һөйөүсәнлеге» барлыҡҡа килгән хөкүмәттәрҙең ысын дәлилдәрен һәм пландарын дипломатик йәшереүҙең иң уңайлы формаларының береһе булып торҙо».

Ләкин Пароди шуны иҫәпкә алырға тейеш, уның тарафынан килтерелгән һөйләм «Буржуаз дипломатияның алымдары тураһында» тигән бүлектә бар. Дипломатия менән дипломатияның айырмаһы бар. Совет государствоһының дипломатияһы бар һәм буржуаз дипломатия бар. Совет государствоһына бер нәмәне лә йәшерергә кәрәкмәй, сөнки тыныслыҡ тураһында, тыныслыҡты нығытыу тураһындағы тәҡдимдәр совет халҡының булһын, шулай уҡ бөтә тыныслыҡ һөйөүсе халҡтарҙың тап интерестәренә тура киләләр. Юғарыла әйтелгән китаптың «Буржуаз дипломатияның алымдары тураһында» тип аталған бүлектә буржуаз дипломатияның халҡтары, шул иҫәптән ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу идеяһы айҡанлы ла халҡтарҙы алдауын раҫлауҫы конкрет миҫалдар килтерелеүен Пароди белергә тейеш ине.

— Күрәһең, Пароди күрмәгән беренсе иллюстрация, тине Громыко, түбәндәгенән тора: Наполеон III (Пародиҙың ватандашы) ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартыу буйынса конференция саҡырырға тәҡдим итте һәм был мәсьәлә буйынса Англияның сит ил эштәре министре Лорд Стенлиға мөрәжәғәт итте. Был нәмә менән килеп тыуҙы һуң? Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу планын бәлки ысынлап та тормошҡа ашырыу теләге булғандыр. Ләкин бөтөнләйгә улай түгел. Наполеон III был тәҡдиме Пруссияның Австрияны еңеүе айҡанлы, кәсәйеүе һәм 1867 йылда Төньяҡ Германия союзы тип аталған союздың төҙөлөүе менән килеп тыуғайны. Англия был мөрәжәғәткә нисек яуап бирҙе һуң? Ул ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыуҙың был идеяһын бөтөнләйгә тәләмәне. Англия дипломатияһы ул ваҡытта йәшеренеү методын ҡулланды. Ике континенталь державаның — Пруссия менән Францияның бәрелешеүенә ул ҡаршы килмәй ине. Шуға күрә ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы тәҡдимдән бер нәмә лә сыҡмаһы. Наполеон III Англияға булған был мөрәжәғәтенән һуң өс йыл ваҡыт үткәс, Пруссия ғәскәрҙәре Францияға баҫып индеиләр.

Шулай итеп, тип билдәләне Громыко, «Дипломатия тарихендә», бында Пароди әйткәнгә ҡарағанда, икенсе төрлөрәк нәмә әйтелгән. Күрәһең, ул үҙе тарафынан килтерелгән цитатанан башҡа был хеҙмәттән бер нәмә лә уҡымаған, уҡыған булһа ла уны тейешенсә аңламаған. Әгәр ҙә инде Пароди уҡыған да һәм уҡығанын аңлаған да булһа, уның өсөн был биргәрәк тә насар, сөнки фактарҙы боҙорға ярамай, ә уларҙы, ғәмәлдә нисек килтерелгән булһалар, шулай күрһәтергә кәрәк.

Ләкин Пароди әфәнде ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы ялған декларацияларға һәм ялған резолюцияларға тап бына СССР-ҙың ҡаршы сығыуын белергә тейеш.

Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса өс держава вәкилдәренең хәҙерге позицияһы яңы түгел. АҠШ, Великобритания һәм Франция ҡоралланыуҙарҙы дөйөм яйға һалыу һәм ҡыҫҡартыу принциптәре тураһында 1946 йылдың 14 декабрендә ҡабул ителгән билдәле резолюцияны үтәүгә ҡаршы килеп, бындай позицияла күптән торалар инде, тип билдәләне СССР вәкиле. Фактар ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу һәм атом ҡоралын тыйыу буйынса Генеральный Ассамблеяның 1946 йылдың 14 декабрендәге резолюцияһында күҙҙә тотолған сараларҙы үткәреүҙе өҙөү өсөн АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең бөтә мөмкин булған нәмәне эшләүҙәрен күрһәтәләр. Һәм хәҙер ҙә көнбайыштағы өс держава вәкилдәре дүрт держава ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне сит ил эштәре министрҙәре Советеның тикшереүен өҙөү өсөн бөтә нәмәне файҙаланалар. Тыныслыҡты яҡлау менән ныҡ ҡыҙыҡһынған бөтә донъя халҡтары ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы темаға һөйләнеүҙәрҙе түгел, ә был бурысты үтәү буйынса практик сараларҙы ғәмәлдә тормошҡа ашырыуҙы талап итәләр.

Үткән ултырышта Паролиҙен, Совет хөкүмәте йәнәһе «Корея мәсьәләһен тыныс юл менән яйға һалыуға булышлыҡ итеү өсөн бер ниндәй ҙә саралар күрмәне» тигән ялған белдереүҙәр менән Көнбайыш державалар тарафынан үткәрелгән ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу политикаһын аҡларға көлкөлө маташыуҙарына ҡағылып, Громыко былай тине:

— Был мәсьәлә буйынса мөһим әһәмиәткә эйә булған ҡайһы бер документтәр менән Пароди үҙенең сыҡышлем, күрәһең, танышмағандыр. Уның СССР-ҙағы иасолы Келли [...] йылда СССР сит ил эштәре мин[...] һында Корея мәсьәләһе буйынса [...] алып барыуҙы, уның барышында [...] лағы хәлде тыныс юл менән яй[...] тураһындағы мәсьәләнең яҡшы билдәле. 1950 йылдың 20 [...] дә был бесеҙа тураһында СССР [...] эштәре министерствоһының белдере[...] ләп ителгәйне. Кореялағы хәлде [...] лыу тураһындағы мәсьәләгә [...] билдәле, Ҡытай халҡ республика[...] киле ҡатнашлығында Имнисслек [...] лә ҡарау уны яйға һалыуҙың [...] средствоһы булыр ине, тип бел[...] Келлигә. Англия вәкиле быға [...] яуап бирҙе һуң? Ул, был, [...] булыр ине, тип яуап бирҙе. Шул[...] Великобритания хөкүмәте, беҙҙ[...] уйыбыҙса, АҠШ хөкүмәтенән, [...] Франция хөкүмәтенән дә [...] Кореялағы хәлде тыныс яйға [...] раһында ул ваҡытта СССР хөкүм[...] рафынан яһалған тәҡдимгә ҡаф[...]

Бер ни тиклем һуңлабыраҡ Совет хөкүмәтенең етәксеһе Генералиссимус Сталиндең Индия премьеры Неру [...] телеграммалар алмашыуын Пароди [...] мәй ҡала алмай. был телеграм[...] Кореялағы хәлде тыныс юл менән [...] һалыу тураһында мәсьәлә ҡуйыл[...] Ләкин Корея[...] интервенция а[...] был тыныс юл менән яйға һалыу[...] лар. АҠШ хөкүмәте һәм Амер[...] Кореялағы интервенцияһын яҡлау[...] дәр Корея мәсьәләһен тыныс юл [...] яйға һалыу тураһындағы башҡа [...] нә тәҡдимдәрҙе лә кире ҡаҡтылар.

— Баштан аяҡ ҡоралланған [...] венттәргә ҡаршы көрәштә Корея ха[...] нығышмалылығы, фиҙакәрлеге [...] халҡының сит ил агрессияһынан [...] үҙенең тыуған ерен яҡлауы менән [...] ла. Бындай фиҙакәрлек үҙ тыуған [...] ҡарата мөхәббәттән килеп сыға. Һ[...] ҙә өс держава вәкилдәрен Кореяны [...] тыныслыҡһыҙландыра икән, улар [...] тынсыҙланыуҙың сәбәптәрен [...] берҙән-бер средствоны файҙалан[...] этап әйткәндә — Кореянан үҙҙәрен[...] тып китһендәр.

Атлантик пакт тураһындағы һәм [...] илдәрҙә Американың хәрби базалары [...] раһындағы мәсьәләне көн тәртибенә [...] дерергә СССР делегацияһының т[...] дәренә өс держава делегацияла[...] ҡаршы килеүҙәренә ҡағылып, Гр[...] совет делегацияһы үҙ тәҡдимдәре[...] тейешле дәлилдәр килтергәйне [...] Американың хәрби базалары сит [...] рияларҙы Советтар Союзына һәм [...] демократияһы илдәренә ҡаршы [...] ныу өсөн төҙөләләр, тип күр[...] тип хәтергә төшөрҙө.

— Мин, — тине йомғаҡлау һ[...] Громыко, — әлеккә ултырышта [...] йыштағы өс держава вәкилдәре [...] тә Пароди менән Дэвис тарафынан [...] ған белдереүҙәр айҡанлы был [...] кәртеүҙәрҙе яһауҙы кәрәкле тип [...] нем.

Громыко сығышының асылы бу[...] Джессеп, Дэвис һәм Пароди бер [...] әйтмәнеләр.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 26 апрель. (ТАСС). Бөгөн Корея Халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының Баш командованиеһе Халҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәренең частәре менән бергәләп бөтә фронттарҙа ла ҡаты һуғыштар алып барыуҙы дауам иттерҙеләр һәм Америка-Англия интервенттәренең ғәскәрҙәренә байтаҡ юғалтыуҙар килтерәләр, тип хәбәр итте.

Үҙәк фронтта Халҡ армияһыны [...] тәре 25 апрелдәге һуғыштарҙа [...] ҙар һәм төрлө хәрби трофейҙар алы[...]

Дошмандың ике самолеты атып [...] релдә.

Ауылға кино килде

Ауыл уртаһында күренекле урында ябай дүртке ҡағыҙға яҙылған иғлан ауылға кино килеүе тураһында белдереп тора:

«Бөгөн, кис, клубта башҡорт телендә «Берлиндең еңелеүе» тигән кино буласаҡ.

Кино килеү ауыл өсөн бик күңелле ваҡиға. Уның башҡорт телендә булыуы тағы ла күңеллерәк хәл. Ҡайһы берәүҙәр ошо картинаны район үҙәгенә барып, күреп ҡайтҡандар. Уларҙың ошо буласаҡ картина тураһында хәбәр һөйләүе бөгөнгө күңеллелекте тағы ла арттыра.

— Иптәш Сталин үҙе башҡорт телендә һөйләй...

— Ә иптәш Молотов... Ворошилов... Улар бөтәһе лә башҡорт телендә һөйләйҙәр.

— Ундай яҡшы картинаға бәрабыҙ, барабыҙ... бөтәбеҙ ҙә барабыҙ.

Кино кис менән, ут алғас башланып китә. Бөгөн клуб халҡ менән шығырым тулы. Киноға килеүселәрҙең клуб эсенә һыйынмағандары тыштан, тәҙрә үтә ҡарап торалар.

Бына сталевар Иванов тау башлап иптәш Сталин янына килә. Сталеварҙы иптәш Сталин бәксала, әл өҫтәндә ҡаршы алә. Ябай сталевар менән бөйөк даһи саф башҡорт телендә һөйләшәләр. Был күренеш залда ултырыусыларҙы тәрән тулҡынландыра.

Тап ошо минуттарҙа экран менән зал араһында йәнле, тормошсан бәйләнеш барлыҡҡа килә. Өйтерһең, иптәш Сталин бөгөн ошо ауылға килгән дә, халҡ менән үҙе һөйләшеп ултыра.

Тракторист Бәхтияровтың күҙ алдынан ауылдың бөтә үҫеш юлы теҙелеп үтә.

Ул үҙе Ватан һуғышынан ҡайтҡан йылдарҙа ғына ауыл былай түгел ине әле. Ул саҡта ауылда электр юҡ ине. Хәҙер ауылда Ильич лампалары балҡып яналар. Ошо кино аппаратын да электр көсө әйләндерә. Ә кино башланыр алдынан колхозсылар электр көсө менән эшләй торған приемниктан радио тыңлайҙар. Өфөнө, Мәскәүҙе һәм башҡа ҙур ҡалаларҙы тыңлайҙар улар.

Хәҙер инде колхозсылар етеш һәм мул тормош менән йәшәйҙәр. Фермала күп мал үрсей. Баҫыуҙарҙа тук башаҡлы иген үҫтерелә. Ошо дүрт-биш йыл араһында ғына ниндәй ҙур үҙгәреш! Ә тағы ла дүрт-биш йылдан нәмә буласаҡ? Ул саҡында колхоз ауылы тағы ла байыраҡ, тағы ла көйәтлерәк булыр.

Ә кешеләр? Кешеләр ҙә тормоштоң үҙе менән бергә үҫәрҙәр. Ауылда хәҙер унарлаған техника оҫталары, тырыш механизаторҙар бар. Ауылдың үҙ интеллигенцияһы үҫте. Был ауылда ете йыллыҡ мәктәп бар.

Экранда Ватан һуғышының тәүге йылдары күрһәтелә. Иптәш Сталин немец илбаҫарҙарына ҡаршы изге көрәшкә күтәрелгән совет халҡы менән етәкселек итә. Совет иленең батыр улдары Сталин исеме менән көслө атакаларға баралар. Сталин исеме тылда йәшәүселәрҙе героик хеҙмәткә рухландыра. Ҡайҙа бөйөк Сталин — унда еңеү!

Бәхтияров үҙе дүрт йыл фронтта булып ҡайтҡан егет. Уға сталевар Иванов үткән юллар бик ныҡ таныштар. Волганан алып Берлинға тиклем үтелгән юл! Күпме интегергә, күпме ауырлыҡтар кисерергә тура килде ул юлда. Бөйөк Сталин беҙҙең менән булған саҡта, ул ауырлыҡтар ғына нәмә ул. Сөнки, бөйөк Сталин исеме ауыр көрәштәрҙә совет кешеләрен рухландырыусы, алға, яңы еңеүҙәргә саҡырыусы байраҡ булып барҙы.

Бына сталевар Иванов бөйөк Сталиндең иң яҡын соратниктәре араһында. Улар бөтәһе лә ябай сталеварҙың эше тураһында, уның нисек ҡорос иретеүе тураһындағы һүҙҙәрен тәрән мауығып тыңлайҙар. Иптәш Сталин өҫтәп-өҫтәп һорауҙар бирә. Һүҙ бөтә халыҡҡа ла аңлайышлы башҡорт телендә бара. Залда ултырыусылар картинаның ошо урынын йотлоғоп ҡарайҙар. Балыҡсы Исхаков:

— Бындай яҡшы картинаны башҡорт теленә тәржемә итеп, бик яҡшы эшләгәндәр. Күрәһеңме, ниндәй яҡшы аңлашыла, ти. Уның һүҙен байтаҡтар ҡеүәтләп ҡуялар. Халҡ араһынан кемдер, бынан егерме йыл элек ауылға тәү башлап кино килеүен хәтерләп ала.

— Ул саҡта әле кино бөтөнләй таусыһыҙ була торғайны. «Туманный картина» тип атала ине ул саҡтағы кинолар. Тора-бара ауылға тауышлы картиналар килә башланылар. Унан һуң төҫлө картиналар. Бына хәҙер рәхәтләнеп башҡорт телендә сығарылған картиналарҙы ҡарайбыҙ. Ҙур үҫеш бит был, егеттәр!

Картина алмашынған арала үҙ-ара фекер алышыуҙар ҡыҙыбыраҡ китәләр.

— Был картинаны башҡорт теленә әйләндереп, айырыуса яҡшы эшләгәндәр. Сөнки был картинала иптәш Сталиндең тарихи эше, ҙур тормошо күрһәтелә. Ул беҙҙең өсөн бик яҡын, үтә кәрәкле йәшәү өлгөһө, ти һарыҡтар ҡараусы һибәт Ғәйназаров.

— Башҡортостан кинофикация управлениеһы яңы сыҡҡан картиналарҙы башҡорт теленә йышыраҡ тәржемә итһә ине, — ти уҡытыусы Мөхәммәтов.

Сөнки, колхоз ауылы хәҙер көн һайын кино ҡарарға тейеш. Колхозсылар уны үҙ телдәрендә ҡарарға тейештәр.

Сөнки, колхоз ауылы хәҙер киноһыҙ йәшәй алмай. Шуға күрә лә, ауылға кино килеүе колхозсылар өсөн ҙур ваҡиға булып тора.

Ә «Берлиндең еңелеүе» һымаҡ яҡшы картиналарҙың башҡорт телендә сығарылыуы, уларҙың ауылдарға барып етеүе гүзәл ваҡиға булып тора.

М. Хәйҙаров,

Учалы районы, Өргөн ауылы.

Үҙәк һәм Көньяҡ Ҡытай Хәрби-Административ комитетенең өсөнсө сессияһы

ПЕКИН, 26 апрель, (ТАСС). «Жэньминьжибао» газетаның хәбәр итеүенсә, 9 апрелдән 16 апрелгә тиклем Үҙәк һәм Көньяҡ Ҡытай Хәрби-Административ комитетенең өсөнсө сессияһы булып үткән. Конференцияла бөгөнгө көндөң төп өс бурысы: Америка агрессияһына ҡаршы һәм Кореяға ярҙам итеү өсөн көрәштең патриотик хәрәкәте, аграр реформа һәм контрреволюцион эшмәкәрлекте баҫтырыу буйынса эш тикшерелгән.

Тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, алты ай эсендә Үҙәк һәм Көньяҡ Ҡытайҙа Америка агрессияһына ҡаршы 9600 массовый протест митингеһе һәм демонстрацияһы булып үткән, уларға 25 миллион самаһы кеше ҡатнашҡан. Бынан тыш, Үҙәк һәм Көньяҡ Ҡытайҙа 53 меңдән күберәк йыйылыш һәм конференциялар булған, унда ҡатнашыусылар япон-ҡытай һуғышы ваҡытында япон империалистәренең яуызлыҡтары тураһында һөйләгәндәр һәм ағымдағы ваҡиғаларҙы тикшергәндәр. Был йыйылыштарҙа һәм конференцияларҙа 16.200 меңдән артыҡ кеше ҡатнашҡан. Үҙәк һәм Көньяҡ Ҡытайҙа аңлатыу эше менән шөғөлләнеүсе группаларҙың 450 мең члене, 46 мең докладсы һәм лектор Ҡытай халҡының патриотик хәрәкәтендә актив ҡатнашты.

1950 йылдың октябрь башынан ноябрь уртаһына тиклем Үҙәк һәм [...]яҡ Ҡытайҙа аграр реформа нигеҙҙә [...] рибә рәүешендә үткәрелде. 1950 й[...] ноябрь уртаһынан алып декабрь [...] һына тиклем аграр реформа Үҙәк [...] Көньяҡ Ҡытайҙың мөһим районда[...] үткәрелде. Һуңғы ярты йыл эсендә [...] миллион халҡ йәшәгән райондарҙа [...] релде. Аграр реформа тамамланған [...] дарҙа эшкәртеүгә яраҡлы бөтә ер[...] ҙән 50 процентҡа тиклеме помещик[...] тартып алынды һәм крәҫтиәндәргә [...] релде. Хэнань провинцияһында һә[...] крәҫтиән 2-нән 3-кә тиклем му е[...] (1 му 1/16 гектарға тигеҙ), Хубэй [...] Хунань провинцияларында һәр бер [...] тиән 1-ҙән 2,5-кә тиклем му е[...] 1952 йылдың яҙына аграр реформа [...] ла 50 миллион кешеле райондарҙа [...] реләсәк. Халҡы 20 миллион кешен[...] ған ҡалған райондарҙа аграр ре[...] 1952—1953 йылдарҙың ҡышын[...] мамлаласаҡ.

Үҙәк һәм Көньяҡ Ҡытайҙа гоминь[...] агенттәрҙең контрреволюцион элем[...] ренең емереү эштәренә ҡаршы акти[...] раш алып барылды.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01949 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тираж 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.
1951 йыл
№ 84 (8801)
29 АПРЕЛЬ
йәкшәмбе
Хаҡы 20 тин

Эшселәр һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙар, инженерҙәр һәм техниктәр! Хеҙмәт етештереүсәнлеген арымай-талмай күтәрегеҙ! Сырьеға, материалдарға, яғыулыҡҡа, электр энергияһына ныҡлы экономия яһау өсөн көрәшегеҙ! Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын арзанайтығыҙ, сифатын яҡшыртығыҙ!

(ВКП(б) Үҙәк Комитетенең саҡырыуҙарынан).

Кадрҙарҙы идея-политик тәрбиәләүҙә ҡеүәтле ҡорал

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты бюроһы ҡарары буйынса, партияның Үҙәк Комитеты рөхсәте менән, иптәш Сталин Әҫәрҙәренең ун алты томы башҡорт телендә баҫылып сығасаҡ. Быйыл уның дүрт томы донъяға сығасаҡ, ә беренсе томы ошо көндәрҙә баҫылып сыҡты ла инде.

Совет халҡының һәм бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең бөйөк юлбашсыһы һәм остазы иптәш Сталин Әҫәрҙәренең башҡорт телендә баҫылып сығыуы республикабыҙ партия ойошмаларының идея-политик тормошонда бик ҙур ваҡиға һәм башҡорт халҡының формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураһына баһа биреп бөтөргөһөҙ ҙур өлөш булып тора.

Башҡорт халҡы И. В. Сталин Әҫәрҙәренең башҡорт телендә баҫылып сығыуын үҙенең большевиктар партияһы һәм уның юлбашсыһы иптәш Сталин етәкселегендә, бөйөк рус халҡының туғанлыҡ ярҙамында культура төҙөлөшө өлкәһендә өлгәшкән иң гүзәл ҡаҙанышы итеп шатлыҡ менән ҡаршы алды. Һәм башҡаса булыуы мөмкин дә түгел. Сөнки батша Россияһы ваҡытында бөтөргә хөкөм ителгән башҡорт халҡы Ленин — Сталин партияһы ярҙамында азатлыҡ алды, үҙенең совет автономияһын төҙөнө, әҙәби телен булдырҙы, культураһының сәскә атыуына тулы мөмкинлек алды.

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы — Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының емеше. Ул... ойоштороусылар — Ленин һәм Сталин Совет Башҡортостанының тәүге көндәренән үк уның хужалығын, культураһын үҫтереү тураһында хәстәрлек күрҙеләр. Совет власы арҡаһында башҡорт халҡы ... булып формалашыу мөмкинлеген алды.

«Совет власы йылдарында, ленинсе-сталинсы милли политика нигеҙендә, — тип яҙҙы «Правда» газетаһы, — илебеҙ бөтә халыҡтары үҙҙәренең үткәндәге артталыҡтарын уңышлы рәүештә еңеп сыҡтылар, промышленность, ауыл хужалығы һәм формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураның үҫешендә бик ҙур һөҙөмтәләргә өлгәштеләр. Беҙҙең илебеҙҙә яңы социалистик милләттәр барлыҡҡа килделәр, ул милләттәр теләһә ниндәй буржуаз милләттәрҙән ныҡ тупланғандар, сөнки улар буржуаз милләттәрҙе эстән тарҡата торған килешмәүсән синфи көрәштән азат һәм теләһә ниндәй буржуаз милләткә ҡарағанда ла дөйөм халыҡсыл булып тора».

Элек башҡорт халҡы үҙенең илен, артта ҡалған, ҡараңғы, халҡының күпселеге уҡый-яҙа белмәгән колония иленән, хәҙер алдынғы индустриялы, ҡеүәтле техника менән ҡоралланған эре социалистик ауыл хужалығы булған илгә әйләндергән. Халҡы тотош грамоталы ғына ... бөтә дөйөм ете йыллыҡ уҡыуҙы тормошҡа ашырыуға керешкән, үҙенең совет интеллигенцияһын — врачтарын, агрономдарын, уҡытыусыларын, яҙыусыларын, артистарын һәм ғалимдарын булдырыуға өлгәшкән, — быларҙың менән ул бөтәһенән элек большевиктар партияһына, бөйөк Сталинға бурыслы икәнен бик яҡшы аңлай. Шуның өсөн дә башҡорт халҡының иптәш Сталинға мөхәббәтенең иге-сиге юҡ, һәм шуға күрә ул үҙенең иң яҡты теләктәрен һәм ынтылыштарын иптәш Сталин исеме менән бәйләй. Республикабыҙ хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең был би... быйыл Башҡорт АССР-ы Верховный Советына булып үткән һайлауҙарҙа асыҡ демонстрацияланылар.

Иосиф Виссарионович Сталин республикабыҙ Верховный Советына беренсе депутат итеп бер күңелдән һайланды.

Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте һәм иптәш Сталиндең үҙенең атайҙарса хәстәрлек күреүе арҡаһында кешелек донъяһының иң бөйөк ҡаҙанышы булған марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә итеп баҫып сығарыу киң ҡолас алды. Маркс — Энгельс — Ленин — Сталиндең байтаҡ һандағы айырым әҫәрҙәре, шул иҫәптән Маркс менән Энгельстең «Коммунистәр партияһы манифесы», В. И. Лениндең һайланма әҫәрҙәре ике томлығының беренсе томы, И. В. Сталиндең «Ленинизм мәсьәләләре» һәм «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсы» һәм башҡа бик күп хеҙмәттәр башҡорт теленә тәржемә ителеп баҫып сығарылдылар. Быларҙың бөтәһе лә беҙҙең кадрҙарыбыҙҙың идея-политик кимәлдәрен байтаҡ күтәреүгә булышлыҡ иттеләр. Шуның менән бергә кадрҙарыбыҙҙа теорияға эйә булыуға ынтылыш, большевизм тарихын киңерәк һәм тәрәнерәк өйрәнеүгә тағы ла ныҡыраҡ ынтылыш тыуҙы. И. В. Сталин Әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыу кадрҙарыбыҙҙың был бик законлы ынтылыштарын күп дәрәжәлә ҡәнәғәтләндерәсәк.

Башҡорт халҡы культураһының артабан сәскә атыуы өсөн һәм республикабыҙ хеҙмәтсәндәре араһында идеологик тәрбиә алып барыу эшендә иптәш Сталин Әҫәрҙәренең башҡорт телендә баҫып сығарылыуының әһәмиәте айырыуса ҙур. **«...халыҡтың миллионлаған массалары культура эшендә, политик һәм хужалыҡ үҫеше эшендә бары тик туған, милли телдә генә алға китә алалар»** тип өйрәтә иптәш Сталин. Бынан шул килеп сыға: беҙ хеҙмәтсән массалар араһында марксизм-ленинизм идеяларын пропагандалауҙы туған телдә алып барыуға, туған телдә доклад тар, лекциялар үткәреүгә, марксизм-ленинизм классиктәренең башҡорт телендә баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәрен массалар араһында таратыуға айырыуса иғтибар бирергә тейешбеҙ.

Быйыл башҡорт телендә иптәш Сталин Әҫәрҙәренең дүрт томы баҫылып сығасаҡ. Кешелек генийенең был Әҫәрҙәре күп һанлы башҡорт милли кадрҙарының, пропагандистәрҙең һәм уҡытыусыларҙың, врачтарҙың һәм журналистарҙың, партия, совет, профсоюз һәм ауыл хужалығы работниктәренең көндәлек ҡулланма китабы булырға тейеш.

И. В. Сталин Әҫәрҙәренең башҡорт телендә баҫылып сығыуы башҡорт халҡына үҙенең формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураһын тағы ла ныҡыраҡ үҫтерергә һәм байыҡтырырға, иң алдынғы культура булған бөйөк рус халҡы культураһын үҙләштерергә мөмкинлек бирер.

«Марксистик-ленинсы теория,... — тип өйрәтә иптәш Сталин, — обстановкаға ҡарата ориентировка яһарға, әйләнә-тирәләге ваҡиғаларҙың эске бәйләнешен аңларға, ваҡиғаларҙың барышын алдан күрергә һәм ваҡиғаларҙың хәҙерге ваҡытта нисек һәм ҡайҙа табан үҫеүҙәрен генә түгел, бәлки уларҙың киләсәктә нисек һәм ҡайҙа табан үҫергә тейешлектәрен дә белергә мөмкинлек бирә».

Совет Башҡортостанының хеҙмәтсәндәре бына ошо бөйөк көскә үҙ туған телдәренә эйә булыу өсөн ҡеүәтле ҡорал алдылар. Бөйөк юлбашсыбыҙҙың гениаль Әҫәрҙәре юл күрһәтеүсе йондоҙ булып, башҡорт халҡын Тыуған илебеҙҙең сәскә атыуы хаҡына хеҙмәттә яңы еңеүҙәргә рухландырыр, коммунизмға барыуҙа һүнмәҫ маяҡ булып уның юлын яҡтыртыр.

Башҡорт АССР-ы медицина работниктәрен ордендәр һәм медалдәр менән наградлау

Башҡорт АССР-ының врачтары һәм ... медицина, фармацевтика работниктәре оҙаҡ йылдар буйына һәм яҡшы эшләүҙәре өсөн СССР Верховный Советы Президиумының 1951 йылдың 14 апрелендәге Указы буйынса ордендәр һәм медалдәр менән наградландылар.

Ленин ордены менән — 26, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән — 12, «Почёт Билдәһе» ордены менән — 31 һәм медалдәр менән 100 медицина работнигы наградланды.

Ленин ордены менән наградланыусылар араһында Агарев Иосиф Андреевич — ... ҡалаһы ғилми-тикшеренеү трахома институтының бүлек мөдире, Ворошилов ... Константинович — республика ... больницаһының консультант-... Дмитриева Анна Игнатьевна — Белорет ҡалаһындағы 3-сө номерле больница акушеркаһы, Еникеева Хәлимә Мөхәррәм ҡыҙы — Өфө ҡалаһындағы акушерско-гинекология клиникаһының акушеркаһы, Кириллова Екатерина Сергеевна — Стәрлетамаҡ ҡалаһының 1-се номерле больницаһының медицина сестраһы, Никифорова Анна Степановна — Ватан һуғышы инвалидтәренең Өфө туберкулезға ҡаршы клиникаһының медицина сестраһы, Огородников Владимир Константинович — республика туберкулезға ҡаршы диспансерының баш врачы, Пономарев Михаил Ипполитович — Красный Ключ больницаһының мөдире, Соболев Евгений Федорович — махсус поликлиниканың бүлек мөдире, Стуков Глеб Павлович — Бәләбәй район больницаһының баш врачы, Юраева Раиса Владимировна — Черниковск ҡалаһының 1-се номерле больницаһының медицина сестраһы һәм башҡалар бар.

БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘӘР СОВЕТЫНДА

Республика колхоздарында һәм совхоздарында яровой культураларҙы сәсеүҙең барышы тураһында

[illegible]

торҙарҙы һәм ауыл хужалығы машиналарын техник тәрбиәләүҙең ҡағиҙәләрен ныҡ һаҡлауҙы тәьмин итергә, уларға МТС механиктәренең ойоштороу һәм техник ярҙам күрһәтеүҙәрен ойошторорға;

е) МТС-тарҙың колхоздар менән төҙөшкән договорҙары буйынса сәсеү эштәрен үҙ ваҡытында үтәү, трактор эштәренең сифаты һәм яғыулыҡҡа, майлау материалдарына, ремонт средстволарына экономия яһау өсөн трактор бригадалары һәм трактористәр араһында социалистик ярыш йәйелдерергә;

ж) трактор бригадаларына машина-трактор станциялары һәм совхоздар етәкселәренең һәм специалистәренең оператив етәкселек итеүен яҡшыртырға, быны өсөн ике яҡлы радиоустановка һәм связдең башҡа средстволарын файҙаланырға.

3. Совхоздар трестары директорҙары Ғилуанов һәм Фоломеев иптәштәрҙе, шулай уҡ совхоздар директорҙарын яҙғы баҫыу эштәре планын үтәүҙә артта ҡалыуҙы бөтөрергә, график буйынса билдәләнелгән сроктарҙа сәсеүҙе тәьмин итергә мәжбүр итергә.

4. Район Советтәре исполкомдарына, район ауыл хужалығы бүлектәренә һәм МТС директорҙарына яҙғы сәсеүҙә колхозсылар араһында дисциплинаны ныҡытыуға һәм хеҙмәтте яҡшыртыуға кәрәкле саралар күрергә тәҡдим итергә; эшкә үҙ ваҡытында сығыуҙы тәьмин итергә, бөтә тор баҫыу эштәрендә бөтә колхозсылар тарафынан эшләп сығарыуҙың көндәлек нормаларының үтәлеүенә өлгәшеү өсөн эш көнөн максималь тығыҙлатырға.

Был маҡсатта бригадаларҙа баҫыу стандары һәм сәсеү эштәрендә шөғөлләнеүсе колхозсылар өсөн общественный туҡланыу ойошторорға.

5. Район Советтәре исполкомдарын, район ауыл хужалығы бүлектәрен һәм МТС, совхоз директорҙарын түбәндәгеләрҙе тәьмин итергә мәжбүр итергә:

а) етешмәгән орлоҡтарҙы тулыландырыуҙы, колхоздарҙың сәсеү өсөн яраҡһыҙ һәм сортһыҙ орлоҡтарын государство ресурстарының кондицияллы сортлы орлоҡтарына алмаштырыуҙы, бөтә орлоҡтарҙы ла таҙартыуҙы һәм һауала йылытыуҙы; күп йыллыҡ үләндәр һәм башҡа мал аҙығы культураларының орлоҡтарын, шулай уҡ йәшелсә, баҡса культуралары һәм ағас орлоҡтарын әҙерләү пункттарынан һатып алыуҙы һәм ташыуҙы иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә тамамларға;

б) һис киҫекмәҫтән сәсеү орлоғо участкалары өсөн иң яҡшы, уңдырышлы ерҙәрҙе бүлергә, уларҙа сәсеүҙе иң яҡшы, һайлап алынған, тик сортлы орлоҡтар менән генә үткәрергә һәм юғары агротехника комплексын ҡулланырға;

в) күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡ үлән, малдар өсөн тамыр аҙыҡтары һәм силос культураларын сәсеүҙәге артта ҡалыуҙы яҡын көндәрҙә бөтөрөргә, мал аҙығы етештереүҙең һәм болондарҙы, көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса эштәр күләменең һәр бер колхозға билдәләнелгән государство планының һис һүҙһеҙ үтәлеүенә өлгәшергә;

г) пропаш культуралар (шәкәр сөгөлдәре, көнбағыш, картоф һәм тамыр аҙыҡтары) сәсеүҙә сәсеүлектәрҙең рәт араларын эшкәртеүҙә максималь механизацияләүҙе иҫтә тотоп үткәрергә.

6. Район Советтәре исполкомдары председателдәренә, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәренә, МТС һәм совхоздар директорҙарына яровой культураларҙы арыш-бүй сәсеү планын үтәүҙең, уҡым культураларын һәм күп йыллыҡ үләндәрҙе өҫтәмә аҙыҡландырыуҙың һәм тырматыуҙың, орлоҡтарҙы һауала йылытыуҙың һәм яровойлаштырыуҙың, шулай уҡ Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының 1951 йылдың 7 апрелендәге 268-се номерле ҡарары менән раҫланған планға ярашлы рәүештә башҡа агрономик кулланмаларҙың барышына систематик контроль урынлаштырырға тәҡдим итергә.

7. Район Советтәре исполкомдары председателдәренән, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәренән, МТС һәм совхоз директорҙарынан ағас ултыртыу эше планын 5 көн эсендә тамамлау өсөн эшлекле саралар күреүҙе талап итергә.

8. Район Советтәре исполкомдарына, район ауыл хужалығы бүлектәренә һәм МТС, совхоз директорҙарына, эштең сифатына систематик контроль урынлаштырып, брак яһаусыларҙы һәм уларҙы яҡлаусы кешеләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырып, яҙғы баҫыу эштәренең юғары агротехник кимәлен тәьмин итергә мәжбүр итергә.

Трактор бригадалары тарафынан үтәлгән эштәрҙе баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙарының көн һайын ҡабул итә барыуын ойошторорға. Сифатһыҙ үтәлгән эштәрҙе браҡҡа сығарырға һәм ҡабатлап эшләргә, ҡабатлап эшләнгән өсөн расходтарҙы брак яһауҙа ғәйепле кешеләр иҫәбенә яҙырға.

9. Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министерствоһын (иптәш Нәбиуллина), совхоздар трестары директорҙарын (Ғилуанов һәм Фоломеев иптәштәрҙе) район ауыл хужалығы бүлектәренә, МТС, совхоз директорҙарына талапсанлыҡты күтәрергә, колхоздарға, МТС-тарға һәм совхоздарға сәсеү үткәреүҙә етәкселекте яҡшыртырға мәжбүр итергә.

10. Сәсеүҙең билдәләнелгән графигын өҙгән һәм сиктән тыш түбән темптарҙа алып барған өсөн Кушнаренко район Советы исполкомының председателе иптәш Садыковҡа һәм район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Усмановҡа шелтә иғлан итергә. Садыков һәм Усманов иптәштәрҙе яҙғы сәсеү планын үтәүҙә килеп тыуған хәлде төҙәтмәһәләр, баҫыу эштәре сифатын яҡшыртмаһалар һәм яровой культуралар сәсеүҙе ҡыҫҡа сроктарҙа үткәреүҙе тәьмин итмәһәләр, тағы ла ҡатыраҡ яуаплылыҡҡа тарттырыласаҡтары тураһында иҫкәртергә.

11. Борай, Федоровка, Абзан райондарының колхоздарында сәсеү темптарын шулай уҡ сиктән тыш түбән тип иҫәпләп, был райондар Советтәре исполкомдары председателдәренең, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәренең яҙғы сәсеүҙең барышы тураһындағы отчеттарын яҡын көндәрҙә Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советында тыңлауҙы кәрәкле, тип иҫәпләргә.

12. Благовар район Советы исполкомы председателе иптәш Камалов, Нуриман — Авзалов, Байҡыбаш — Филиппов, Бишбүләк — Васильев, Мәсетле — Фәхретдинов, Архангель — Покало, Бәләбәй — Виноградов, Баҡалы — Камаев, Белорет район Советы исполкомы председателе Усманов иптәштәрҙең иғтибарын яровой культуралар сәсеүгә етәкселектең ҡәнәғәтләнмәҫлек булыуына йүнәлтергә һәм уларҙың яҙғы сәсеү графигын үтәү һәм уның юғары сифатлы булыуы өсөн персональ яуаплы булыуҙары тураһында иҫкәртергә.

РЕСПУБЛИКАБЫҘҘЫҢ ХЕҘМӘТСӘНДӘРЕ 1 МАЙҘЫ ПРОИЗВОДСТВОЛА ЯҢЫ ЕҢЕҮҘӘР МЕНӘН ҠАРШЫЛАЙҘАР

☆

Сәғәт графигы буйынса эшләйҙәр

Мәләүез МТС-ының иптәш Харисов етәкселек иткән комсомолец-йәштәрҙең трактор бригадаһы 1950 йылда трактор эштәренең йыллыҡ планын 151 процентҡа үтәне һәм МТС күләмендә беренсе урынды яулап алды.

Бригада коллективы быйыл да 800 гектар ер һөрөргә һәм һәр бер гектарҙан 15 центнер урожай алырға йөкләмә алды. Ул яҙғы сәсеүҙә ойошҡанлыҡ менән башланы. Бригада тракторҙары Киров исемендәге эреләтелгән колхозды хеҙмәтләндерәләр. Улар сәғәт графигы буйынса, тәүлек әйләнәһенә эшләйҙәр. Һәр бер механизатор алынған йөкләмәне үтәү өсөн көрәшә. Хәҙерге көндә йәш тракторист Камаев ДТ—54 тракторында һәр сменала 7 гектар урынына 14 гектар ер һөрә. Шулай уҡ бригаданың башҡа члендәре лә нормаларын арттырып үтәйҙәр. Бригада Май алды социалистик ярышына ҡушылып алған йөкләмәһен намыҫ менән үтәй.

Ш. Хәйруллин.

☆ ☆

Прогрессив методты киң ҡулланып

Благовар районы Сыңташтамаҡ МТС-ы механизаторҙары быйыл үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарға һәр гектарҙан 14-әр центнер урожай алыуҙы тәьмин итергә һүҙ бирҙеләр.

Трактор бригадаларының Май алды социалистик ярышында иптәш Ялаев етәкселек иткән 9-сы номерле трактор бригадаһы алда бара. Ул хәҙер МТС-та беренселекте алып тора. Был бригаданың «Яңы ил» колхозын хеҙмәтләндергән тракторсы иптәш Ғәзизов күсмә Ҡыҙыл Байраҡты яулап алды. Ул 20 апрелдә, сәғәт графигы менән эшкә башлауҙың тәүге көнөндә, смена нормаһын 202 процентҡа үтәүгә өлгәште. 13 сәғәтлек эш ваҡытында, планда ҡаралған 42 гектар урынына, 85 гектар ашлыҡ сәсте һәм, шуның менән бергә, 73 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. 26 апрелгә иптәш Ғәзизов 200 гектар майҙанды культивацияланы һәм 400 гектар майҙанда ашлыҡ сәсте, 50 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Был бригаданың трактористәре смена нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр. Трактористәрҙән Рәшит Сәүбәнов һәм Биглер Эрих иптәштәр баҫыуҙа эшләүҙең тәүге көндәрендә үк СТЗ — НАТИ тракторы менән 15,6-шар гектар урынына 20-шар гектар ер һөрҙөләр. Хәҙер МТС-тың башҡа трактор бригадаларында ла тракторист иптәш Ғәзизов өлгөһөндә эшләүгә күсәләр.

МТС дирекцияһы хәҙер сәғәт графигы буйынса эшләү методын бөтә бригадаларға күсереү юлында эш күрә. Иптәш Ялаев бригадаһы тәжрибәләрен бөтә бригадаларға күсереү һәм, шуның менән, яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары агротехник кимәлдә үткәреү беҙҙең бөгөнгө төп бурысыбыҙ булып тора.

А. Биглов,
Сыңташтамаҡ МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары.

☆

Иртә культуралар сәсеүҙе тамамланылар

Моторный МТС-ының Матросов исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Афанасьев етәкселек иткән трактор бригадаһы члендәре сәғәт графигы буйынса эшләп, 6 көн эсендә 500 гектар майҙанда иртә культуралар сәсеп, планды тулыһынса үтәнеләр.

Димитров исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Богомазов етәкселек иткән трактор бригадаһы трактористәре Малаханов һәм Шолох иптәштәр смена заданиеларын 120—125 процентҡа үтәйҙәр. Ошо уҡ бригаданың Пушкин исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе трактористәре Борзаносов һәм Гасников иптәштәр ҙә баҫыу эштәрендә өлгө күрһәтәләр.

Моторный МТС-ы хеҙмәтләндергән «Парижская коммуна», «Красная звезда» һәм Ленин исемендәге колхоздар ҙа Май байрамын иртә культуралар сәсеүҙе тамамлау менән ҡаршылайҙар.

Х. Йосопов

Ленинсе-Сталинсе милли политика

Башҡорт совет интеллигенцияһының өҫтәл китабы

Иптәш Сталин Әҫәрҙәре беренсе томының башҡорт телендә донъяға сығыуы республикабыҙҙың идея һәм культура тормошонда ҙур ваҡиға булып тора.

В. И. Ленин менән И. В. Сталин һәм большевиктар партияһы Советтар Союзы халыҡтарының формаһы менән милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураларын, шул иҫәптән милли әҙәби телдә үҫтереү мәсьәләләренә һәр ваҡыт мөһим әһәмиәт биреп килделәр. Был йәһәттән Октябрь социалистик революцияһынан һуң барлыҡҡа килгән, эшләнгән башҡорт әҙәби теле айырыуса асыҡ миҫал булып тора. Большевиктар партияһы һәм Ленин менән Сталин етәкселегендә Совет власы йылдарында, айырыуса сталинсе биш йыллыҡтар осоронда башҡорт әҙәби телен үҫтереү һәм камиллаштырыу буйынса ҙур уңыштарға өлгәшелде. Шуның менән бергә, урындағы һәм үҙәк институттарҙа уҡып сыҡҡан һәм практик эш тәжрибәһе туплаған тәржемәселәр һәм редакторҙар кадрҙары үҫеп етеште. Был марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыу эшенә башларға мөмкинлек бирҙе. «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы», В. И. Ленин менән И. В. Сталиндең айырым әҫәрҙәре баҫып сығарылды. Был әҫәрҙәрҙең донъяға сығыуы марксизм-ленинизмды өйрәнеүсе уҡыусылар тарафынан ғәйәт ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алынды. Марксизм-ленинизм классиктәренең хеҙмәттәрен туған телдә уҡыу мөмкинлеге беҙҙең интеллигенциябыҙҙы рухландыра, уларға марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен, большевизмдең революцион теорияһын тәрән өйрәнеүгә ярҙам итә.

Иптәш Сталиндең күп томлы гениаль әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыуға башлау айырыуса шатлыҡлы һәм күренекле ваҡиға булып тора.

Иптәш Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томы баҫылып сыҡты. Уға тәржемәселәр һәм тәржемәнең редакторҙары ғәйәт ҙур хеҙмәт һалғандар. Был ваҡиға большевиктар партияһының көндәлек ярҙамы арҡаһында башҡорт әҙәби теленең ҡыҫҡа срокта иптәш Сталиндең гениаль фекерҙәрен һәм учениеһын уҡыусыларға туған телдә еткерә алыу кимәленә тиклем үҫеүен күрһәтә.

Башҡорт халҡының тарихы мәсьәләләре менән шөғөлләнеүсе ғилми работник буларак, иптәш Сталин Әҫәрҙәре беренсе томының донъяға сығыуын мин айырыуса шатлыҡ менән ҡаршылайым. Ул беҙҙең совет фәнен сәскә аттырыу өсөн көрәшебеҙҙә ҙур ярҙам итәсәк.

Иптәш Сталин Әҫәрҙәре беренсе томының донъяға сығыуы ленинсе-сталинсе милли политиканың яңы еңеүен һәм тантана итеүен күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта ул йыртҡыстарса яуызлыҡ менән халыҡтарҙың хоҡуҡтарын һәм милли суверенитеттарын аяҡ аҫтына һалып таптаусы, прогрессив кешелек донъяһын бөлдөрөргә ынтылыусы Америка-Англия һуғыш тоҡандырыусыларына ғәйепләү акты булып тора.

Иптәш Сталин Әҫәрҙәре беренсе томының башҡорт телендә донъяға сығыуы — беҙҙең өсөн онотолмаҫлыҡ ваҡиға. Был том — бөтә башҡорт совет интеллигенцияһының өҫтәл китабы. Бынан һуңғы томдарҙың да бер-бер артлы өҙлөкһөҙ сығып тороуын көтәбеҙ.

А. Усманов,
тарих фәндәре кандидаты.

Китаптар магазинында. Һүрәттә: (һулдан уңға) китаптарға яҙылыу бүлегенең мөдире З. Дименкова М. Ғафури исемендәге тел, әҙәбиәт һәм тарих институтының ғилми хеҙмәткәре Н. Гулин һәм РСФСР халыҡ артисы F. Минһажев иптәштәргә И. В. Сталин Әҫәрҙәренең башҡорт телендәге 1-се томын бирә.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Өлгөрөү билдәһе

Бөйөк юлбашсыбыҙ Ленин һәм Сталин етәкселеге аҫтында барлыҡҡа килгән Октябрь социалистик революцияһы батша самодержавиеһының йыртҡыслыҡ политикаһы менән үлеп бөтөүгә хөкөм ителгән хеҙмәтсән башҡорт халҡына үҙенең Совет государствоһын төҙөргә мөмкинлек бирҙе.

Ленин — Сталин партияһының милли политикаһы борон орфографияһы ла булмаған башҡорт халҡын, формаһы менән милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураһы сәскә ата торған, социалистик бер милләт булыу дәрәжәһенә күтәрҙе.

...Шуның һөҙөмтәһендә башҡорт әҙәби теле хәҙер даһи Ленин, даһи Сталиндең гениаль әҫәрҙәрен тәржемә итерлек булып өлгөрөү дәрәжәһенә иреште. Бына шуға күрә лә, беҙ бөгөн бик тәбиғи рәүештә, Иосиф Виссарионович Сталин әҫәрҙәре тулы йыйылмаһының башҡорт телендә баҫылып сыҡҡан беренсе томын сикһеҙ шатлыҡ һәм ғорурлыҡ менән ҡаршы алабыҙ.

Ғорурланып, Тыуған иле өсөн
Ҡаршыһына баҫып донъяның —
Башҡорт халҡы ҡулына алды бөгөн
Үҙ телендә Сталин томдарын.
Улар беҙҙең өҫтәлдәрҙең йәме,
Хеҙмәт, көрәш, еңеү асҡысы.
Яҡтыртталар юғары меңерга
Коммунизм алтын баҫҡысын.

Сәйфи Ҡудаш.

Китап

Бәрәү һорай: «әйтсе зинһар,
Яҡын дуҫың кем һинең?»

Мин үҙемдең яуабымда
Шатланып «китап» тинем.

Берәү һорай: «иң яратҡан
Китабың ҡайһы һинең?»

Мин үҙемдең яуабымда
«Даһи томдары» тинем.

Быны һораған иптәштәр
Миңә ҡулдар бирҙеләр,
Сөнки беләм, үҙҙәре лә
Шул фекерҙә инеләр.
Китап беҙгә юл яҡтырта
Кешегә бирә белем,
Шуға ла китапты һөйеп
Уҡырға ҡушҡан Ленин.

А. Игебаев.

Тыуған илебеҙ культураһының һәм фәненең сәскә атыуы өсөн

[illegible]

Өфө нефть институтында преподава- [illegible]

[illegible] ...тәләбәләр һәм студенттар иптәш Сталин Әҫәрҙәре беренсе томының башҡорт телендә сығыуын [illegible] большевиктар партияһына, иптәш Сталинға ҙур рәхмәт белдерәләр.

Институт коллективы, бөтә совет халҡы кеүек үк, был хәстәрлеккә яуап итеп, бөйөк Тыуған илебеҙ культураһының һәм фәненең артабан сәскә атыуы өсөн үҙенең бөтә көсөн һәм энергияһын бирәп эшләргә әҙер торғанлығын белдерә.

Р. Даутов,
Өфө нефть институты партия ойошмаһы секретары.

БЕҘҘЕҢ ТОРМОШ ЙӨРӘГЕ

[illegible] ...лына, юлбашсыбыҙ бөйөк Сталинға ҡайнар рәхмәт тойғоһо менән тула. Иптәш Сталиндең Әҫәрҙәре башҡорт телендә баҫылып сығыуы беҙҙең йөрәгебеҙҙе үҙ партиябыҙға, Совет хөкүмәтенә, һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға мөхәббәт менән тултырҙы.

[illegible] ...лырға ярҙам итте.

Беҙ: «Беҙҙе Сталин кеше итте» тибеҙ. Был ябай ғына һүҙгә бик тәрән мәғәнә һалынған. Был һүҙ минең халыҡ артисы дәрәжәһенә күтәрелеүемде, йөҙҙәрләгән кешеләрҙең ғалим булыуҙарын, меңәрләгән кешеләрҙең уҡытыусы, врач, агро- [illegible] ...зың, иптәш Сталиндең беҙҙең хаҡта хәстәрлегенә эш менән, марксистик-ленинсе теорияға эйә булыуыбыҙҙы ижади эшебеҙҙә күрһәтеү менән яуап ҡайтарырбыҙ.

F. Минһажев,
РСФСР-ҙың халыҡ артисы.

Партия кадрҙарын тәрбиәләүҙә мөһим ҡулл...

Гениаль етәксебеҙ һәм у... Иосиф Виссарионович Сталиндең ... беренсе томының башҡорт телендә ... лып сығыуы беҙҙең райондың ... ойошмаларында ҙур шатлыҡ ты... Партияһыҙҙар һәм коммунистар ... Әҫәрҙәрен туған башҡорт телендә ... саҡтар һәм тағы ла тәрәнерәк ... бөтә тырышлыҡтарын һалаҫаҡтар.

Иптәш Сталин Әҫәрҙәренең ... телендә сығыуы, беҙгә — парти... никтәренә, марксизм-ленинизм ... менән тағы ла ныҡыраҡ ҡорал... һәм уны етәкселектә ҡулланыр... рыуса ҙур ярҙам итәсәк.

Мин, үҙем, ләһиҙен Әҫәрҙәрен ... менән өйрәнәм һәм йыш ... араһында докладтар, лекциялар ... сығыш яһайым. Әлегә тиклем, бы... ҙәрҙең айырым цитаталарын башҡ... ленә тәржемә иткәндә мин ауы... ҡала инем. Һөйләмдәрҙе йыйнаҡ ... асыҡ, аңлайышлы итеп төҙөй алм... ғайным. Ә хәҙер, юлбашсыбыҙ ... нең әҫтәлеген үҙләштереү менән ... нәрәтләнмәй, уның бай һәм гүҙәл ... башҡортса өйрәнеү өҫтөндә лә ... һыҙ шөғөлләнәсәкмен.

Сталин Әҫәрҙәренең беренсе то... башҡорт телендә донъяға сығыу... ленинсе-сталинсе милли политик... яңы тантанаһы ул.

З. Ирмә...
ВКП(б)-ның Бөрө район комите... секретары.

Беҙгә иң кәрәкле әҫәр

Башҡорт әҙәбиәте әле марксизм-... ленинизм классиктәренең әҫәрҙәре ... түгел. Был хәл марксизм-ленинизм ... рияһын өйрәнеүҙә байтаҡ ҡыйынлыҡ ... тыуҙыра ине. Шунлыҡтан ... Сталиндең Әҫәрҙәренең башҡортса ... *лып сығыуы партия мәғарифе с...* *дә эшләүсе* пропагандистар, ... тантар ғына түгел, бәлки большев... тарихын һәм теорияһын бөтә өйрәнеүс... партия, совет һәм хужалыҡ етәкс... ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм шатлыҡ ... көттәләр.

Иптәш Сталиндең Әҫәрҙәре больш... тарихын һәм теорияһын тулы һәм ... өйрәнеүселәр өсөн бик мөһим ... лып тора. Иптәш Сталин бөйөк Л... менән бергә большевиктар партияһы ... ҙаусы, уның теоретик, ойоштороу ... тактик нигеҙҙәрен эшләүсе юлбашс... Партия тарихын, марксизм-ленинизм т... рияһын тулы өйрәнеү һәм уға эйә бул... иптәш Сталин хеҙмәттәренән башҡа ... кин түгел, әлбиттә.

Иптәш Сталиндең Әҫәрҙәре һәр ... пропагандист, консультант, һәр бер ... татор, партия, совет һәм хужалыҡ ... селәренең, хеҙмәткәр һәм уҡытыусы... ҙың һәм марксизм-ленинизм теория... өйрәнеүсе һәр бер кешенең китап ... һендә булырға тейеш. Улар өсөн ... Әҫәр ҙур ярҙам, мөһим ҡулланма, ... рияға эйә булыуҙа булышлыҡ итеүсе ... рал булыр.

А. Ғиматов,
ВКП(б)-ның Киров район комите... пропагандисы.

Башҡортостан партия ойошмаһының идея тормошонда күренекле ваҡиға

С. СӘЕТБАТТАЛОВ,
ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының рөхсәте менән, ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты бюроһының ҡарары буйынса беренсе тапҡыр иптәш Сталиндең Әҫәрҙәре 16 томда башҡорт телендә баҫып сығарыла башланы.

Иптәш Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томы донъяға сыҡты, йыл аҙағына тиклем тағы ла өс томы, киләһе йылдарға ҡалған бөтә 16 томы баҫылып сығасаҡ.

Был Башҡортостан партия ойошмаһының һәм башҡорт халҡының идея-политик тормошонда күренекле ваҡиға, ленинсе-сталинсе милли политика триумфының яңы ҡаҙаныше булып тора.

Әгәр ҙә башҡорт халҡының беҙҙең көндәргә тиклем булған тарихына, хәҙерге Башҡортостан үҙе Ленин — Сталин идеяларының асыҡ ҡаҙаныше булып әүерелгәнгә тиклем булған осорға күҙ ташлаһаң, иптәш Сталин Әҫәрҙәренең башҡорт телендә баҫып сығарылыуының никадай ҙур ваҡиға булыуы асыҡ аңлашыла.

Башҡорт халҡының бай тарихы бар, унда героик биттәр бик күп.

Монгол баҫып алыусыларына ҡаршы көрәш, Мәскәү государствоһына ҡушылыу һәм һәр төрлө илбаҫарҙарға ҡаршы, шул иҫәптән Наполеондың ябырылыуына ҡаршы көрәштә ҡатнашыу, башҡорттарҙың үҙ юлбашсылары Салауат етәкселегендә Пугачевтың крестьяндар һуғышында ҡатнашыуҙары — быларҙың бөтәһе лә башҡорт халҡының рус халҡы менән дуҫлыҡтарының һәм бергәләп көрәшеүҙең быуаттар буйына килгән традицияларын. Граждандар һуғышында башҡорттар Петроградты оборонлауҙа ҡатнаштылар. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт кавалерия дивизияһы немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы батырҙарса һуғыштылар. Башҡорт халҡының был боевой традициялары Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының 25 йыллығы көнөндә ВКП(б) Үҙәк Комитетының һәм Халыҡ Комиссарҙары Советының ҡотлауында билдәләп үтелделәр.

Бына шул борон замандан килгән тарихы, ҙур боевой традициялары, бай эпик фольклоры, һирәк осрай торған мелодик халыҡ музыкаһы булған талантлы башҡорт халҡы революцияға тиклем, царизм шарттарында колонизаторҙарҙың — рус һәм сит ил помещиктарының һәм капиталистарының, шулай уҡ башҡорт һәм татар феодалдарының, байҙарының һәм буржуазияһының иҙеүе аҫтында, экономик һәм рухи яҡтан баҫтырылып йәшәне, уның экономик һәм культура яғынан үҫергә мөмкинлеге булманы. Башҡорт халҡы ҡараңғылыҡта һәм наҙанлыҡта йәшәне, туған телдә уҡый һәм яҙа алманы.

Большевиктар партияһы башҡорт халҡын ҡайтанан тергеҙҙе. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң, большевиктар партияһы ихтыяры менән һәм бөйөк рус халҡының ғәйәт ҙур ярҙамында башҡорт халҡы үҙенең социалистик экономикаһын һәм культураһын үҫтереү өсөн сикләнмәгән мөмкинлектәр алды, үҙенең государствоһын төҙөнө.

Совет Башҡортостанының ойоштороусылар һәм төҙөүселәр — В. И. Ленин менән И. В. Сталин Совет власының беренсе көндәренән үк Башҡортостанға, башҡорт халҡына уның экономик һәм культура яғынан үҫеүенә ашығыс һәм ҙур ярҙам күрһәтергә кәрәклеге тураһында һәр ваҡыт күрһәтеп килделәр.

Совет власының беренсе йылдарынан уҡ башҡорт халҡының ҙурлаһы булдырылды һәм башҡорт телендә китаптар һәм газеталар баҫып сығарыу саралары күрелде, Добавлю: ул ваҡытта мөмкинлектәр сикләнгәйне. В. И. Ленин партияның VIII съезында яһаған сығышында бик скромный бурысты — Совет Конституцияһын башҡорт телендә баҫып сығарыуға тотоноу бурысын ҡуйҙы, был акттың бик ҙур пропагандистик һәм политик-тәрбиәләү әһәмиәте барлығын билдәләп үтте.

Иптәш Сталин үҙенең съездарҙа яһаған сығыштарында, элекке артта ҡалған халыҡтарға ярҙам күрһәтеү тураһында һөйләп, башҡорт халҡына һәм айырыуса уның тау-урман райондарына ярҙам күрһәтеү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды, промышленность пролетариатын, бигерәк тә төп, башҡорт милләтенән булған эшселәр кадрҙарын булдырыу, партия ойошмаһын нығытыу, республиканы экономика һәм культура яғынан үҫтереү, формаһы менән милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураны алға ебәреү кәрәклеге тураһында мәсьәлә ҡуйҙы.

Совет власы йылдарында, айырыуса сталинсе биш йыллыҡтар осоронда, Совет Башҡортостанында тарихи үҙгәрештәр, ҙур социалистик үҙгәртеп ҡороуҙар булып үтте. Башҡортостан алға киткән күп тармаҡлы промышленносе, социалистик ауыл хужалығы, бай культураһы булған сәскә атыусы республикаға әүерелде. Башҡортостан рухи культура муллығын булдырыу юлынан ышаныслы рәүештә алға бара.

Марксизм-ленинизм классиктарының — Маркс — Энгельс — Ленин — Сталиндең әҫәрҙәрен үҙ туған телендә уҡыу һәм өйрәнеү мөмкинлеге башҡорт халҡының ҙур культура ҡаҙаныштарының береһе булып тора.

Хәҙерге ваҡытта Ленин — Сталиндең бик мөһим әҫәрҙәре, шул иҫәптән В. И. Ленин Әҫәрҙәренең һайланма ике томы, иптәш Сталиндең «Ленинизм мәсьәләләре», Маркс менән Энгельстең ҡайһы бер әҫәрҙәре башҡорт теленә тәржемә ителгәндәр.

Иптәш Сталин өйрәткәнсә, пролетариат диктатураһы һәм социализм төҙөү осоро Советтар Союзының бөтә милләттәренең үҫеү һәм сәскә атыу осоро, формаһы менән милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураның сәскә атыу осоро булып тора.

Иптәш Сталин милли мәсьәләнә гениаль рәүештә эшләне, илебеҙ халыҡтарының телен һәм халыҡтар телендә культураны үҫтереү кәрәклеген күрһәтте.

Иптәш Сталин үҙенең тел ғилеме мәсьәләләре буйынса һуңғы гениаль хеҙмәттәрендә культураның милли формаһы телдә ҡаҙаныеүен, телдең аралашыу, йәмғиәттең көрәш һәм үҫеүенең ҡеүәтле ҡоралы булып тороуын күрһәтте. Иптәш Сталиндең был хеҙмәттәре һәр бер халыҡтың телен, шул иҫәптән башҡорт халҡының да телен, үҫтереү мәсьәләһенә тулы асыҡлыҡ индерҙе.

Иптәш Сталин был хеҙмәтендә, башҡорт халҡын борондан килгән тарихы булған башҡа халыҡтар менән бергә ҡуйып, ҡайһы бер милләтселәрҙең, үҙ ваҡытында, башҡорт теленең булыуын инкар итеүҙәренә ҡапма-ҡаршы рәүештә, башҡорт теленең күптән үк йәшәүен һыҙыҡ өҫтөнә алып үтте.

Иптәш Сталин хеҙмәттә һәм көрәштә телдең ролен юғары күтәрҙе һәм бөтә халыҡтарҙың телен һәм культураһын үҫтереү мәсьәләһен ҡуйҙы.

1929 йылда уҡ әле үҙенең «Милли мәсьәлә һәм ленинизм» тигән хеҙмәтендә дөйөм мәжбүри уҡыу индереүҙең илдә культура революцияһын тормошҡа ашырыу өсөн мөһим шарт булыуы тураһында һөйләп, иптәш Сталин, илебеҙҙә туған телдәге мәктәптәрҙең киң селтәрен булдырыу, уларҙы туған телде яҡшы белгән уҡытыусылар кадры менән тәьмин итеү, партия, профсоюз ойошмаларынан алып государство һәм хужалыҡ ойошмаларына тиклем идара итеү управлениеларын составы яғынан милли итеү, туған телдә матбуғатты, кинотеатрҙы, учреждениеларҙы үҫтереү кәрәклеген күрһәтте. «...халыҡтың миллионлаған массалары культура эшендә, политик һәм хужалыҡ үҫешендә барыһы тиҙ туған, милли телдә генә алға китә алалар» ти иптәш Сталин.

Китаптарҙы, газеталарҙы башҡорт телендә таратыуҙы артабан яҡшыртыу, туған телдә доклад, лекциялар ҡуйыу кәрәклеген Өлкә Комитетҡа килгән күп һанлы хаттар һәм һорауҙар бик ныҡ әйтеп торалар.

Докладтар, лекциялар һәм беседалар менән туған телдә сығыш яһауҙың кәрәклеге тураһында йыйылыштарҙа алынған күп һанлы записькалар ҙа шул уҡ турала һөйләйҙәр.

Шул әйткәнлы әҙәбиәтте һәм беренсе нәүбәттә марксизм-ленинизм классиктарының, иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып таратыу ҙур государство әһәмиәтенә эйә булған сараларҙың береһе булып тора.

Иптәш Сталин Әҫәрҙәренең башҡорт телендә баҫып сығарылыуы беҙҙең интеллигенциябыҙға, партия, совет, комсомол һәм ауыл активының киң ҡругына марксистик-ленинсе уҡыуға ҡушылырға, Маркс — Энгельс — Ленин — Сталиндең гениаль идеяларын тәрәнерәк өйрәнергә мөмкинлек бирәсәк.

Иптәш Сталин Әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыуҙың республиканың культураһын артабан сәскә аттырыуҙа һәм совет интеллигенцияһы кадрҙарын һәм бөтә хеҙмәтсәндәрҙе идея-политик тәрбиәләү эшендә ҙур әһәмиәткә эйә буласаҡ.

Лениндән һуң тарихи тәжрибә нигеҙендә иптәш Сталин тарафынан ижади үҫтерелгән һәм байыҡтырылған үлемһеҙ учениеһе общественный үҫештең закондарын һәм перспективаларын аса, ул кешелек донъяһының алға, коммунизмға хәрәкәтен тиҙләтеүсе, ҡеүәтле үҙгәртеп ҡороусы көс булып тора.

Хәҙер, бөтә юлдар ҙа коммунизмға алып барған осорҙа, тәбиғәттең һәм обществоның үҫеш закондары тураһындағы фән, иҙелгән һәм эксплуатацияланған массаларҙың революцияһы тураһындағы фән, бөтә илдәрҙә лә социализмдың еңеүе тураһындағы фән, коммунистик общество төҙөү тураһындағы фән булған марксизм-ленинизмдең бөйөк әһәмиәте бөтәһен ... аңлайышлы.

Иптәш Сталиндең билдәләүе буйынса «Ленинизм-марксизмдең артабан үҫеүе ... лып, пролетариаттың синфи көрәше ... яңы шарттарындағы марксизм булып ... ра, империализм һәм пролетар революциялар эпохаһының марксизмы бул... ерҙең алтынан бер өлөшендә социализмдың еңеүе эпохаһының марксизмы бул... тора» (Ҡыҫҡаса курс, 342-се бит).

Ленинизмдең ролен түбәнәйтергә, ... сизм менән ленинизмде бер-береһенә ... шы ҡуйырға маташыусы доппель... менттәргә отпор биреп, марксизм-ле... низмдең айырылмаҫлыҡ органик бер... леген күрһәтеп, иптәш Сталин ... тине:

«Ленинизм ул Ленин учениеһы ... марксизм түгел. Ленинизм ул — ... риализм һәм пролетариат революция... эпохаһы марксизмы. Икенсе төрлө ... сәндә, ленинизм Маркс тарафынан ... гәндәрҙең бөтәһен дә үҙ эсенә ала, ... өҫтөнә марксизм хазинаһына Ленин ... гән һәм Маркс тарафынан бирел... ҙең бөтәһенән ҡотолғоһоҙ килеп ... торған яңы нәмәләрҙе... үҙ эсенә ...» (7 том, 247-се бит).

Иптәш Сталиндең хеҙмәттәре ... һында ла шуны уҡ әйтергә мөмкин.

Иптәш Сталин марксизм хазина... Ленин тарафынан индерелгән бер ... нәмәләрҙе дөйөмләштереүсе һәм үҫ... марксизмдең гениаль теоретиге, ... революцияһының бөйөк стратегы, ... сәндәрҙе миллионлаған массала... ойоштороусыһы һәм юлбашсыһы ... ған Лениндең бөйөклеген күрһәтте, ... сизм-ленинизмдең ижади характеры... уын, уның халыҡ-ара интернационал... мәтен айырыуса көс менән күрһәтте.

Шуның менән бергә, иптәш Стал... хеҙмәттәрендә марксизм-ленинизм ... рәүештә артабан үҫтерелде.

Быны иптәш Микоян иптәш Ста... 70 йәше тулыуға арналған «Коммун... дең бөйөк зодчийы» тигән мәҡәлә... бик асыҡ күрһәтте.

Иптәш Сталин, ти ул үҙенең ... һендә, Маркс—Энгельс—Лениндең

ТРИУМФЫНЫҢ ГУЗӘЛ КӘУҘӘЛӘНЕШЕ

Шатлыҡлы ваҡиға

Бөйөк аҡыл эйәһе, фәндәр корифейе И. В. Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томының башҡорт телендә баҫылып сығыуы башҡорт халҡы һәм Башҡортостан партия ойошмаһы тормошонда ҙур шатлыҡлы ваҡиға булып тора.

Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте Октябрь социалистик революцияһының беренсе көндәренән үк башҡорт халҡының экономикаһын һәм культураһын үстереү тураһында атайҙарса хәстәрлек күрҙеләр һәм күреп киләләр. Октябрь революцияһына тиклем башҡорт халҡы царизм һәм милли феодалдар тарафынан ҡаты эксплуатацияға дусар ителеп килде. Уның үҙ яҙмаһы, милли культураһы, фәнни һәм культура учреждениеләре булманы. Бары тик Совет власе генә артта ҡалған милләттәргә формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе менән социалистик культураны, фәнде бығаса күрелмәгән темптар менән үстереү мөмкинлеген бирҙе. Башҡорт халҡына марксистик-ленинсе фәнде үҙенең әсә телендә өйрәнеү өсөн мөмкинлектәр тыуҙырылды. «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы», «Ленинизм мәсьәләләре» һәм марксизм-ленинизм классиктарының башҡа күп кенә әҫәрҙәре башҡорт теленә тәржемә ителеп, баҫылып сығарылды.

И. В. Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томын башҡорт телендә баҫып сығарыу башҡорт фәне һәм культураһы үҫешенең, кадрҙарҙы марксистик-ленинсе тәрбиәләүҙең яңы этабы булып тора. Башҡорт халҡы бөйөк юлбашсы Әҫәрҙәренең үҙ телендә баҫылып сығыуын ҙур шатлыҡ менән ҡаршылай.

О. Сөләймәнов,

Өфө нефть институтының марксизм-ленинизм кафедраһы преподавателе.

Сталинсе хәстәрлек

Бөтә донъя халыҡтарының киң ҡатлауҙары араһында Иосиф Виссарионович Сталин Әҫәрҙәре кеүек популяр булған бер генә китап та юҡ. Халыҡ демократияһы илдәренең халыҡтары һәм капитализм ҡоллоғонда иҙелеүсе бөтә хеҙмәтсәндәр бөтәһе бөйөк юлбашсыбыҙҙың гениаль хеҙмәттәрен ғәйәт ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнәләр.

Ленин һәм Сталиндең гениаль хеҙмәттәре коммунизм төҙөү һәм тыныслыҡ өсөн көрәштә беҙҙең бөтә эшмәкәрлегебеҙҙең нигеҙен тәшкил итәләр. Беҙҙең совет ғалимдәре өсөн һәм донъялағы бөтә прогрессив ғалимдәр өсөн был хеҙмәттәр ғилми-эшлекле күңелдән хеҙмәт итеүҙең өлгөһө һәм фәнни ижадтың гениаль үрнәге булып торалар.

Юлбашсыбыҙҙың хеҙмәттәрен тәрән һәм систематик өйрәнеү беҙгә, коммунизм төҙөүселәргә, шулай уҡ бөтә донъяла тыныслыҡ, демократия һәм социализм өсөн көрәшеүселәргә еңеүгә ышаныс, дәрт бирәләр.

И. В. Сталиндең Әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыу — шатлыҡлы тарихи ваҡиға, башҡорт хеҙмәтсәндәрен идеологик яҡтан тәрбиәләү тураһында Сталинсе хәстәрлектең кәүҙәләнеше.

Х. Дәүләтшин,

доцент, техник фәндәре кандидаты.

«Октябрь натискыһы» типографияһының төплөү цехында. **Һүрәттә:** төплөү цехының контролеры А. Афанасьева, тороусе С. Хәмидуллина И. В. Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томын ҡулланыусыларға ебәреү өсөн әҙерләйҙәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ҡеүәтле идея ҡоралы

Иптәш Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томы башҡорт телендә баҫылып сығыуы *башҡорт халҡы өсөн бик ҙур ваҡиға булып тора.* Марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен хәҙер туған телдә өйрәнеүгә мөмкинлек тыуҙы. Ә пропагандист булып эшләгән иптәштәргә уның әһәмиәте тағы ла ҙурыраҡ.

Иптәш Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томы 1901 йылдан 1907 йылдарҙа булған ваҡиғаларҙы әсендә ала. Был осор беҙҙең большевиктәр партияһының тарихында ваҡиғаларға иң бай осорҙарҙан һанала. Был ваҡытта яңы тип марксистик партияға нигеҙ һалынды.

Был йылдарҙағы бай ваҡиғаларҙы өйрәнмәйенсә тороп, хеҙмәтсән халыҡтың бөйөк даһиҙәре Ленин һәм Сталиндең фәнни марксистик партияны төҙөү өсөн ниндәй ҙур эш алып барғандарын аңлау мөмкин түгел.

Иптәш Сталин В. И. Лениндең учениеләрен һәм практик күрһәтмәләрен яҡлау ғына түгел, уны тормошҡа ашырыуҙа *революцион хәрәкәттең башында* булды. Ул хеҙмәтсән киң массаны самодержавиегә ҡаршы көрәшкә — иркле тормошҡа ынтылып алыуға көрәшкә рухландырҙы.

В. И. Лениндең «Ни эшләргә?» тигән әҫәрен яҡлап, иптәш Сталин «Ҡутаистан хат», «Партия эсендәге фекер айырымлыҡтары тураһында ҡыҫҡаса», «Социал-демократияға яуап» тигән теоретик мәҡәләләр яҙып сыҡты. Уның был гениаль хеҙмәттәре «экономистарҙы», аҙаҡтан меньшевиктәрҙе башынан алып аҙағына тиклем фашланы һәм яңы типтағы партияны төҙөүҙә ленинизм идеяларын теоретик яҡтан артабан байытыуға хеҙмәт итте.

Иптәш Сталин «Социал-демократтар милли мәсьәләне нисек аңлайҙар?» тигән мәҡәләһе менән марксистик милли мәсьәләне теоретик яҡтан нигеҙләй һәм уны пролетариаттың экономик һәм политик азатлыҡ өсөн синфи көрәшенә бәйләүҙе хәл итте.

Совет кешеләре партия тарихын айырыуса ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнәләр. Иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыу был эштә бик ҙур ярҙам булып тора. Беҙ, пропагандистар, бынға тиклем В. И. Ленин һәм И. В. Сталин Әҫәрҙәренән цитаталарҙы русса уҡып аңлата торғайныҡ. Хәҙер иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен башҡорт телендә уҡырға мөмкинлектәр асылды.

Марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен үҙ телендә өйрәнеү түңәрәк члендәренең уҡыу сифатын да яҡшыртыр һәм уларҙың занятиеларҙа активлектәрен дә арттырыр.

С. Мотәлов,

Өфө ҡиже-мамыҡ комбинатында «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса юғары типтағы түңәрәктең пропагандисы.

АЛДЫНҒЫ ТЕОРИЯҒА ЭЙӘ БУЛАЙЫҠ!

Марксизм-ленинизм теорияһы — хеҙмәтсән халыҡтың теорияһы ул. Ошо иң алдынғы теория менән ҡоралланған большевиктәр партияһы 1917 йылда Россия хеҙмәтсәндәрен капитализм ҡоллоғонан ҡотҡарҙы. Иптәш Сталин һәм большевиктәр партияһы етәкселегендә илебеҙҙә фәнни коммунизмдең төп положениеләре тормошҡа ашырылды ла инде. Быны һәр ҡайһыбыҙ үҙебеҙҙең мул һәм шат тормошобоҙҙа күҙәтәбеҙ. Шуға күрә лә беҙҙең халҡыбыҙ марксизм-ленинизм теорияһына эйә булыуға ҙур ынтылыш күрһәтә.

Беҙҙең Үҙәк электр станцияһы эшселәре быға асыҡ миҫал булып тора. Бында бөтә кадровый эшселәр ҙә партия мәғарифе селтәрендә марксизм-ленинизм теорияһын һәм партия тарихын өйрәнәләр.

Марксизм-ленинизмдең бөйөк теоретигы И. В. Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томының башҡорт телендә баҫылып сығыуы беҙҙе бик шатландырҙы. Был республикабыҙҙың идея тормошонда ҙур ваҡиға.

Марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен беҙҙең үҙебеҙҙең туған телебеҙҙә өйрәнергә мөмкинлектәр тыуҙырған өсөн партиябыҙға һәм хөкүмәтебеҙгә ҙур рәхмәт.

Ғ. Кәримов,

Ишембай ҡалаһы Үҙәк электр станцияһы машинисы, политик түңәрәк етәксеһе.

КИТАП ҺӘМ УЙҘАР

Һис тиң түгел
Йөрәк шатлығыма
Ялҡыны ла домна утының:
Үҙ телемдә кешелек генийенең
Ғүмер юлын асып уҡыйым
Китап...
Һис бер
алтын менән дә ул
Яҙылмаған,
ләкин һәр бите,
Донъялағы барлыҡ алтындарға
Тиңһеҙ
бөйөк уның ҡиммәте.
Китап...
Һәр бер юлы уның йөрәгемдә
Йәшәү уты булып ҡабына.
Ауыр йылдар,
даһи үткән юлдар
Алға килеп баҫа
бары ла:
Бына Тифлис...
Һыуыҡ подвалдарҙа
Уй бишек йәшлек ҡыйыу көрәшсе
Листовкалар яҙа...
Көрәш утын
Тоҡандырға миллион йөрәктә
Баку урамы:
Бына алғы сафта
Колонналар менән ул килә.
Царизмға
Нәфрәт менән бергә
Ҡотолғоһоҙ ҡурҡыу килтерә.
Иркутск һәм Турухан һыртындары
Електәргә үтә һыуыҡтар.
Ләкин уның йөрәге ҡайнар,
унда
Бөйөк өмөт,
еңеү уты бар.
Царицында
утлы дауыл ҡотора
Үлем сәсеп үкерә пушкалар.
Йәшәү, еңеү булып
алғы сафта
Ҡыҙыл Армия менән ул бара.
* * *
Кешелектә
мәңге күрелмәгән
Ирк таңы атты нурланып.
Бәхет, өмөт булып бар халыҡҡа
Балҡыны Кремль нурҙары.
Ә ул бөгөн
шунда,
Кремлдә
Тын йоҡламай.
Карта
алдында,
Ленин томын тотҡан,
бүлмә буйлап
Атлай,
уйлай
Ватан хаҡында.
Бөйөк аҡыл:
бына
бәхет нурын һирпеп
Яҡтырырҙар Волга уттары.
Ҡалҡып сығыр
мәғрур төҙөлештәр,
Яҡты
Коммунизм йорттары.
Ҡоролоҡтан мәңге киблеп ятҡан
Ҡом бураны уйнаған
далалар
Сәскә атыр,
гүзәл йәшлек булып
Һуҙылырҙар иркен каналдар...
— ... Барыһы ла Ленинсә,
Ә бит Ленин
Ҡалдырҙы уға еңеү байрағын
Шул байраҡты
бөйөк яуҙар аша
Берлинга ул илтеп ҡаҙаны,
Беҙгә иреклек,
бәхет кителмәгән
Ҡунаҡ булып килеп инмәне.
Уның өсөн күпме ҡорбан бирҙек,
Күпме дауылдарҙы кисмәнек?!..
Шул бәхетте тартып алыр өсөн
Ҡоторалар
тағы
буржуйҙар.
Ләкин ерҙә
Мәңге һүнмәй торған
Дәрәҫлек бар,
изге дуҫлыҡ бар...
Ҡояш булып
Балҡып тора бөтә донъяға.
Ошо исем менән барлыҡ быуын
Киләсәккә яҡты юл яра.
Йылдар ағыр...
Ерҙә тик иркәләр
Коммунизмдең шат ҡояшы.
Ә ул һаман аҡыл биреп торор.
Мәңге булыр бөйөк юлбашсы!

Рафаэль Сафин.

Белемдәр сығанағы

Бөйөк юлбашсыбыҙ һәм учителебеҙ И. В. Сталин Әҫәрҙәренең беренсе томын башҡорт теленә тәржемә итеп баҫып сығарыу Башҡортостан республикаһы хеҙмәтсәндәренең идея тормошонда ҙур ваҡиға булып тора.

Большевиктәр партияһы һәм иптәш Сталин донъяла иң алдынғы марксизм-ленинизм теорияһын киң пропагандалау тураһында өҙлөкһөҙ хәстәрлек күрәләр.

«...Фәндең шундай бер тармағы бар,— тип өйрәтә И. В. Сталин, **— ул тармаҡты белеү фәндең бөтә тармаҡтарындағы большевиктәр өсөн мәжбүри булырға тейеш, ул — общество тураһындағы, обществоның үҫеш закондары тураһындағы, социалистик төҙөлештең үҫеш закондары тураһындағы, коммунизмдең еңеүе тураһындағы марксистик-ленинсе фән».**

Бөйөк юлбашсының гениаль хеҙмәттәре киң халыҡ массаларына марксизм-ленинизмдең бөйөк идеяларына эйә булырға ярҙам итәләр һәм хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик обществоны төҙөргә өйрәтәләр. И. В. Сталиндең Әҫәрҙәрен башҡорт халҡы үҙ туған телендә уҡыясаҡ һәм үҙ алдына уларҙы аңлы өйрәнәсәк. Юлбашсы Әҫәрҙәренең башҡорт телендә сығыуы студенттәр менән аспиранттарға марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен, политик экономияны, диалектик һәм тарихи материализмды өйрәнеүҙә байтаҡ еңеләйтәсәк.

Иптәш И. В. Сталиндең башҡорт телендә баҫып сығарылған Әҫәрҙәре хеҙмәтсәндәрҙе коммунизм рухында тәрбиәләүҙә һәм формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе менән социалистик башҡорт совет культураһын алға үҫтереүҙә ғәйәт ҙур роль уйнай.

Ғ. Сәетбатталов,

Башгоспединститут аспиранты.

Ленин мирасына тамам эйә булып ҡына ҡалмаһын, һәр төҫтәге оппортунизмға ҡаршы аяуһыҙ көрәштә марксистик-ленинсе теорияны яҡлап алып ҡына ҡалманы, үҙ учителдәренең фәнни мирасын гениаль аңлатыусы булып ҡына ҡалманы, бәлки марксизм-ленинизмде күп кенә яңы асыштар менән байытты һәм марксистик-ленинсе теорияны артабан үҫтерҙе.

Иптәш Сталиндең хеҙмәттәрендә ленинизм яңы, юғары тарихи баҫҡысҡа күтәрелде. Иптәш Микояндың билдәләүе буйынса, хәҙерге көндә ленинизм «империализм» пролетар революцияһы эпохаһының, СССР-ҙа еңеүле рәүештә социализм төҙөү һәм Үҙәк һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европа илдәренең, бөйөк Ҡытай халыҡтарының халыҡ демократияһы һәм социализм юлына тарихи боролоуы һәм донъялағы иҙелгән халыҡтарҙың империализмға ҡаршы бығаса күрелмәгән хәрәкәте эпохаһының марксизмы» булып тора. Был билдәләү ленинизмде үҫтереүгә иптәш Сталин тарафынан индерелгән бөйөк яңы нәмәләрҙе сағылдыра.

Иптәш Сталиндең хеҙмәттәрендә донъяны үҙгәртеп ҡороусы марксистик-ленинсе философия үҙенең юғары нөктәһенә олғашты.

Иптәш Сталиндең бөтә әҫәрҙәре, тип Микоян, беҙҙең быуат башында марксист-ленинсының матбуғатта беренсе сығыштарынан башлап, Сталин даһиһының сәскә атыуы осоронда бөйөк фән корифейының классик хеҙмәттәренә тиклем, фекерҙең тиңдәшһеҙ асыҡлығы, һәр әйтелгән бирелгән ябайлығы, ысын ғилми аҙым-эҙлелек, төп принциптарҙың һәм ҡараштарҙың даимилеге менән характерлана.

Иптәш Сталиндең гениаль хеҙмәттәрендә бирелгән был тәрән һәм асыҡ характеристика бөйөк юлбашсының әҫәрҙәрен өйрәнеүҙең әһәмиәте ниндәй бөйөк булыуын асыҡ күрһәтә.

Иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен халыҡтар телендә, шул иҫәптән башҡорт телендә, баҫып сығарыу коммунизм төҙөү өсөн көрәштә беҙҙең күп һанлы уҡыусыларыбыҙҙың ҡулына бөйөк идея ҡоралын бирә, иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен бөтә хеҙмәтсәндәрҙең достояниеһы итә.

Шуның менән бергә, иптәш Сталиндең Маркс—Энгельс—Ленинда булған бөтә төп нәмәләрҙе һәм үҙе индергән бөтә яңы нәмәләрҙе үҙ эсенә алыусы әҫәрҙәре башҡорт халҡына формаһы менән милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураны тағы ла үҫтерергә һәм байыҡтырырға, бөйөк рус халҡының алдынғы культураһы менән ныҡлап танышырға, был культураға эйә булырға мөмкинлек бирә. Ә был милли кадрҙар өсөн бик мөһим.

Иптәш Сталин ленинизмде рус һәм бөтә донъя культураһының иң юғары ҡаҙанышы тип атаны. Һәм бына хәҙер башҡорт халҡы рус һәм бөтә донъя культураһының был бөйөк ҡаҙанышы менән тағы ла киңерәк танышыу мөмкинлеген ала.

И. В. Сталиндең Әҫәрҙәренең беренсе томына 1901 йылдан алып 1907 йылдың апреленә тиклем ваҡыт эсендә, башлыса, иптәш Сталиндең Тифлистәге революцион эшмәкәрлеге осоронда яҙылған әҫәрҙәре ингән.

Беренсе рус революцияһының был йылдарында большевиктәр В. И. Ленин етәкселегендә марксистик-ленинсе партияға нигеҙ һалдылар. Яңы типтағы партияны — большевиктәр партияһын төҙөүҙә, уның идеологияһын, политикаһын һәм тактикаһын, ойоштороу һәм теоретик нигеҙҙәрен эшләүҙә иптәш Сталин Лениндең иң яҡын соратниге булды.

Иптәш Сталиндең беренсе томға ингән әҫәрҙәре үҙенең революцион эшмәкәрлегенең башынан алып иптәш Сталиндең Ленин юлынан барыуын һәм яңы типтағы партияны төҙөүҙең бөтә мәсьәләләрен Ленин менән бергә эшләүен күрһәтә.

Иптәш Сталин үҙенең теоретик хеҙмәттәрендә Ленин менән бергә яңы типтағы революцион марксистик партияның, ленинизм партияһының ҡеүәтле идея ҡоралын әҙерләне.

Беренсе томды әҙерләү өҫтөндә утыҙ кеше эшләне. Был иһә, ленинсе-сталинсе милли политиканы тормошҡа ашырыу нигеҙендә марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыу кеүек ҙур эшкә тулыһынса әҙерлекле булған милли башҡорт кадрҙарының, интеллигенцияның үҫеп етешеүен тағы ла бер тапҡыр раҫлай.

Марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен, иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыу кадрҙарыбыҙҙы марксистик-ленинсе теория менән ҡоралландырыу эшен тағы ла юғарыраҡ күтәрергә, пропаганда эшен тағы ла киңерәк файҙаланырға мөмкинлек бирә.

Беҙҙең партиябыҙ кадрҙарҙың марксистик-ленинсе уҡыуҙарына бик ныҡ иғтибар итә. Марксистик-ленинсе теория беҙҙең кадрҙарыбыҙҙы общественный үҫеш закондарын белеү менән байыҡтыра, уларға большевизмға эйә булырға ярҙам итә, уларҙы уңышлы хужалыҡ һәм культура төҙөлеше эшенә, коммунизмдең еңеүе өсөн көрәшкә идея яғынан ҡоралландыра.

Марксизм-ленинизм, тип өйрәтә иптәш Сталин, юл күрһәтеүсе йондоҙ ул. Марксистик-ленинсе теория көндәлек эштә практиктарҙың юлын яҡтырта һәм уларға йүнәлеш бирә, ул практикаға ориентировка, еңеүгә ышаныс, ваҡиғаларҙы күреү генә түгел, бәлки алдан күрә белеүҙе лә бирә.

Государство, хужалыҡ һәм партия эшенең теләһә ниндәй тармағындағы работниктарҙың политик кимәле һәм марксистик-ленинсе аңлылығы иң тиклем юғары булһа, тип өйрәтә иптәш Сталин, эш үҙе лә шул тиклем емешлерәк, эштең һөҙөмтәләре шул тиклем эффектлерәк була.

Большевиктәр партияһының тарихын һәм теорияһын белеү кадрҙарға беҙҙең партиябыҙҙың политикаһын тәрән аңларға мөмкинлек бирә, ә партияның политикаһы, билдәле булыуынса, беҙҙең социалистик ҡоролошобоҙҙоң тормош нигеҙе ул. Марксизм-ленинизм теорияһын белмәһәләр, большевизмға эйә булмаһалар, үҙҙәренең теоретик артталыҡтарын бөтөрмәһәләр, беҙҙең кадрҙарыбыҙ ике аяҡҡа ла аҡһаҫаҡтар.

Коммунистик төҙөлештең бөтә тармаҡтарына дөрөҫ етәкселек итеү бурысы практиктарҙың марксистик-ленинсе теорияға эйә булыуҙарын, практик эш мәсьәләләрен хәл иткәндә теорияға таяна белеүҙәрен талап итә.

Беҙҙең партиябыҙ һәр ваҡыт коммунистарға юғары талап ҡуйып килә, марксистик-ленинсе аңлылыҡты күтәреүҙе уларҙың иң беренсе бурысы итеп ҡарай. Иптәш Сталин былай тип өйрәтә:

«Марксизм-ленинизм теорияһын үҙләштереү — был теорияның асылын үҙләштереү тигән һүҙ һәм пролетариаттың синфи көрәшенең төрлө шарттарында революцион хәрәкәттең практик мәсьәләләрен хәл иткәндә ошо теория менән файҙалана белергә өйрәнеү тигән һүҙ» (ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы, 339-340-сы биттәр).

Идеологик эш һаман да ҙурыраҡ роль ала барған хәҙерге шарттарҙа, кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтарын бөтөреү, реакцион идеологияның һәр төрлө кәүҙәләнештәренә ҡаршы, совет кешеләренә буржуаз йоғонто үткәреүгә маташыуҙарға ҡаршы ҡырҡа көрәш алып барыу талап ителгән ваҡытта, коммунистарҙың идея-теоретик кимәлдәрен күтәреү айырыуса ныҡ талап ителә. Сөнки коммунистарҙың һәр береһе хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙә актив ҡатнашырға һәм үҙ бурыстарын уңышлы үтәргә тейештәр.

Хужалыҡ һәм культура төҙөлешенең темптарын тиҙләтеү өсөн көрәштә коммунистик аңлылыҡтың ғәйәт ҙур әһәмиәте һәм хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙе көсәйтеүҙең кәрәк булыуы, — быларҙың бөтәһе лә коммунистарҙың юғары марксистик-ленинсе белемле булыуҙарын һәм уларҙың большевистик сыныҡтырылыуын талап итә.

Беҙҙең партиябыҙ партия мәғарифен яҡшыртыу, коммунистарҙың, партияһыҙҙарҙың һәм бөтә интеллигенциябыҙҙың, бөтә кадрҙарыбыҙҙың идея-теоретик үҫеүе өсөн кәрәкле булған бөтә шарттарҙы тыуҙырҙы.

Марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәре ғәйәт ҙур тираждарҙа баҫып сығарыла.

В. И. Ленин Әҫәрҙәренең дүртенсе баҫмаһының донъяға сығыуы, иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен халыҡтар телендә, шул иҫәптән башҡорт телендә баҫып сығарыу, күп һанлы пропагандистар кадрҙарын әҙерләү — быларҙың бөтәһе лә кадрҙарыбыҙҙың марксистик-ленинсе уҡыуҙары өсөн бығаса күрелмәгән шарттар тыуҙырҙы.

Беҙҙең партиябыҙ, партия мәғарифе системаһында түңәрәктәрҙең, семинарҙарҙың киң селтәрен ойоштороп, уларҙа үҙ алдарына уҡыусылар менән бергә коммунистарҙың дөйөм һанының 90 проценттан күберәк өлөшө шөғөлләнә. Беҙҙең республикабыҙҙа ла коммунистарҙың һәм интеллигенцияның төп массаһы политик уҡыуҙың төрлө формаларына йәлеп ителгән.

Республиканың партия ойошмаларында ағымдағы йылда 1676 политик мәктәп, ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса 3152 түңәрәк, И. В. Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 741 түңәрәк, 76 район партия мәктәбе, ес ерҙә марксизм-ленинизмдең киске университеты эшләп килә, марксистик-ленинсе теорияны 21016 кеше үҙ алдына өйрәнә.

Шулай итеп, быйылғы уҡыу йылында политик уҡыуҙың төрлө формалары менән партия ойошмаһының дөйөм һанының 95,6 проценты солған алынған.

Партия мәғарифе селтәрендә, коммунистарҙан тыш, партияһыҙҙарҙан һәм комсомолецтарҙан 16225 кеше уҡый.

Партияһыҙҙар өсөн айырым рәүештә ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса 697 түңәрәк, И. В. Сталин биографияһын өйрәнеү буйынса 734 түңәрәк, 217 политик мәктәп ойошторолған. Комсомол политик мәғарифе селтәрендә политик уҡыуға 76 мең 713 комсомолец һәм союздан тыш йәштәр йәлеп ителгән. Политик уҡыуҙың төрлө формалары менән бөтәһе 186 мең коммунист, комсомолецтар һәм партияһыҙҙар солған алынған.

Был мәғлүмәттәр хәҙерге ваҡытта пропаганда эшенең ҙур ҡолас алыуы тураһында һөйләйҙәр.

Марксистик-ленинсе уҡыуҙың был ғәйәт ҙур селтәрендә бик күп башҡорттар һәм татарҙар уҡый, улар араһында туған телдәге әҙәбиәткә мохтаж булған кешеләр күп. Был, иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен башҡорт телендә баҫып сығарыуҙың айырыуса әһәмиәткә эйә булыуын күрһәтә.

Бурыс иптәш Сталин Әҫәрҙәренең бөтә 16 томын тиҙерәк, яҡшы сифатлы итеп, юғары фәнни кимәлдә баҫып сығарыуҙан тора. Был — Госиздат һәм «Октябрь натиски» типографияһы работниктарының һәм был эшкә йәлеп ителгән бөтә работниктарҙың — тәржемәселәрҙең, рецензенттарҙың һәм редакторҙарҙың намыҫ эше.

Иптәш Сталиндең башҡорт телендә баҫып сығарылған Әҫәрҙәрен уҡыусыларҙың киң ҡатламына — коммунистарға, совет интеллигенцияһы кадрҙарына, эшселәргә һәм колхозсыларға еткереү, парткабинеттарҙың, культура-ағартыу учреждениеларының, мәктәптәрҙең, профсоюз ойошмаларының һәм башҡаларҙың библиотекаларын иптәш Сталин Әҫәрҙәре менән тәьмин итеү мөһим бурыс булып тора.

Хәҙер республикабыҙҙың бөтә райондарында һәм ҡалаларында иптәш Сталиндең Әҫәрҙәренә подписка йыйнау йәйелдерелде. Был эш Баймаҡ, Маҡар, Әбйәлил, Абзан һәм Бөрө райондарында ойошҡанлыҡ менән бара. Подписканы ойошҡан рәүештә үткәреүҙе тәьмин итеү һәм уны яҡын арала бөтөрөү өсөн кәрәкле булған бөтә сараларҙы күрергә кәрәк.

Иптәш Сталиндең башҡорт телендәге Әҫәрҙәре, һис шикһеҙ, бөтә коммунистарҙың, партияһыҙ интеллигенцияның, башҡорт һәм татар активының китап кәштәһендә булып һәм көндәлек эштә өҫтәлдән төшмәй торған китабы булып әүерелер.

ХАЛҠ ХУЖАЛЫҒЫН ҮҪТЕРЕҮҘӘ ГОСУДАРСТВО ЗАЕМДАРЫ

СССР халҡ хужалығын артабан үҫтереүҙә Совет хөкүмәте тарафынан сығарыла торған государство заемдары мөһим урын тота. Улар Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәте һәм хеҙмәтсәндәрҙең тормошо артабан сәскә атыуына булышлыҡ итәләр. Государство заемдары СССР-ҙың хужалыҡ һәм культура төҙөлешен киңәйтеү һәм үҫеш темпын тиҙләтеү өсөн өҫтәмә средстволар сығанағы булып тора. Беҙҙең заемдарыбыҙ халҡ араһында ғәйәт ҙур популярлыҡ менән файҙалана. Һәр бер совет гражданины уға яҙылыуҙы үҙенең намыҫ эше, патриотик бурысы итеп ҡарай.

Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡ йылдарында заемдар аша государствобыҙ 50 миллиард һум самаһы средство алды һәм был средстволар, башлыса, капиталь төҙөлешкә, күп меңләгән предприятиеләрҙе төҙөүгә һәм ауыл хужалығын механизациялаштырыуға ебәрелде. Был аҡсалар Магнитогорск металлургия комбинаты, Ростсельмаш, Уралмаш, Сталинград, Харьков һәм Челябе трактор заводтары, Мәскәү, Горький һәм Ярославль автомобиль заводтары кеүек социалистик промышленностең гигант төҙөлештәрен барлыҡҡа килтереүҙә ярҙам күрһәтте.

Государство заемдары Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҙур роль уйнаны. Улар аша килгән аҡсалар хәрби предприятиеләрҙе финанс менән тәьмин итеүҙең мөһим сығанағы булды, дошманды тар-мар итеүҙе тиҙләтеүгә булышлыҡ итте. Совет кешеләре үҙ һаҡлыҡтарынан һуғыш йылдарында государствобыҙға 76 миллиард һумдан күберәк средство биреп торҙолар.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа заемдар буйынса ингән аҡсалар 130 миллиард һум самаһын тәшкил итте. Улар Тыуған илебеҙҙең халҡ хужалығын йылдам аяҡҡа баҫтырыуға һәм артабан үҫтереүгә йүнәлтелде.

Заемдар средстволар ылыҡтырыуҙың регуляр сығанағы булыу менән бергә, хеҙмәтсәндәргә ҙур доходтар килтерә. Тик һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында ғына халҡҡа 17 миллиард һум самаһы отош түләнде.

Беҙҙең республикабыҙ буйынса ла мәғлүмәттәр характерлы һәм күрһәткесле булып тора. Мәҫәлән, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре һуғышҡа тиклемге йылдарҙа 477 миллион һумлыҡ заем облигациялары алдылар. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында үҙҙәренең һаҡлыҡтарынан государствобыҙға үтескә 1 миллиард 334 миллион һум самаһы бирең, еңеү фондына ҙур вклад индерҙеләр. Һуғыштан һуңғы осорҙа республикабыҙҙа заемдар буйынса 1 миллиард 118 миллион һумдан артығыраҡ средство инде.

Был йылдар эсендә Башҡортостандың һаҡлыҡ кассалары тарафынан облигация тотоусыларға 320 миллион 590 мең һум, шул иҫәптән үткән йылда 34 миллион 568 мең һум отош түләнде.

Өфө ҡалаһындағы 8 март исемендәге тегеү фабрикаһының комсомол коллективы заем [illegible] эшләй. Фабриканың эшселәре [illegible].
ҺҮРӘТТӘ: урталаһ, һулдан уңға — [illegible] Козикова [illegible] комсорг председателе А. Стародубова, [illegible] тикшерәләр.
А. Червинский фотоһы.

Илебеҙҙә государство заемдары — ул совет халҡының мул һәм культуралы тормошта йәшәүенең күрһәткесе булып тора. [illegible]

Тик үткән йылда ғына [illegible] 1951 йылдың 1 мартына [illegible]

Был мыҫалдар совет халҡының [illegible] большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәтенең даими хәстәрлеге тураһында һөйләйҙәр.

Үткән йылда, Совет хөкүмәте тарафынан 20 миллиард һум самаһы [illegible]. СССР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү Бишенсе государство заемына [illegible] 27,5 миллиард һумға етте. Башҡортостан хеҙмәтсәндәре СССР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү Бишенсе государство заемына [illegible]

[illegible]

[illegible] гигант Куйбышев, Сталинград, Каховка гидроэлектростанцияларын һәм грандиоз һуғарыу каналдарын төҙөй.

Я. Бәҙретдинов,

Башҡорт АССР-ы хеҙмәт һаҡлыҡ кассалары һәм госкредит Управлениеһе начальнигы урынбаҫары.

ЮҒАРЫ УРОЖАЙ ҮҪТЕРЕҮ ӨСӨН

Рауил Сәетгәрәев—Шаран районы «Сеҙ» колхозының иң алдынғы бригадиры. Ул [illegible]

Бригада уҙған йыл 74 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 17-шәр центнер, [illegible] 14-әр центнер урожай алғайны. [illegible]

И. Фәтхетдинов.

Йөкләмәмде намыҫ менән үтәйем

Мин 12-се йыл [illegible] һыйыр һауыусы булып эшләйем. [illegible] һәр бер һыйырҙан 1650-шәр литр, ә айырым һыйырҙарҙан 2800-әр литр һөт һауып алғайным. Ә быйыл кәмендә 3000-әр литр һөт алырға һүҙ бирҙем. Йөкләмәмде намыҫ менән үтәйем. Һөт һауып алыу заданиеһен ай һайын арттырып үтәп киләм.

О. Гуляева,

Дыуан районы Ленин исемендәге колхоздың һыйыр һауыусыһы.

НАМЫҪЛЫ ХЕҘМӘТ

Йәмәғуҙа районы «Ағиҙел» колхозының һыйыр һауыусыһы Хәдисә Иҫәнғолова үҙ эшенең мастерлегенә йылдан-йыл арттыра бара. Бәтәһе 12 һыйыр тәрбиәләй һәм ул тәрбиәләгән һыйырҙар колхозда иң көр һәм һөтлө һыйырҙар булып иҫәпләнә. Ул һөт һауып алыу планын йыл һайын арттырып үтәй.

Иптәш Иҫәнғолова үҙенең намыҫлы хеҙмәте өсөн 2 һарыҡ һәм аҡса менән бүләкләнде.

М. Йосопов.

Йәш институтта

Мәсетет укытыусылар институты [illegible]

[illegible] лекторҙарын һәм теоретик белемде практикала оҫта ҡуллана белеүҙәрен күрһәтте.

Ш. Ғәрипов.

Агиткультбригада ойошторолдо

Учалы районының культура йорто алты кешенән агиткультбригада ойошторҙо. Бригада «Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре» тигән темаға лекция бирәсәк. Лекциянан һуң бер пәрҙәлек пьеса һәм концерт номерҙары күрһәтеләсәк.

Былардан башҡа Ахун ауыл Советының клубы эргәһендә лә агиткультбригада ойошторолдо. Агиткультбригада «Нисек итеп тотороҡло урожай алырға» тигән темаға лекция, «Бригадир» һәм «Хужа Насретдин колхозда» исемле сәхнә әҫәрҙәре менән «Ҡыҙыл партизан» колхозында сығыш яһаны ла инде.

Ә. Әбдерахман.

КУЛЬТУРА РАБОТНИКТӘРЕНЕҢ СЕМИНАРЫ

Бөзәяз. Районда культура-ағартыу учреждениелары работниктәренең өс көнлөк семинары булып үтте. Унда «Социализмдан әкренләп коммунизмға күсеү тураһында», «Халҡ-ара хәл тураһында» һәм «Башҡа планеталарҙа тормош бармы?» тигән темаларға квалификациялы доклад-тар һәм лекциялар уҡылды.

Шуның менән бергә, яҙғы сәсеү осоронда стена газеталарының бурыстары тураһында ВКП(б) райкомы секретаре иптәш Ивановтың докладлы булды.

II квартал өсөн эш планы, агиткультбригадалар төҙөү мәсьәләләре ҡаралды һәм ошо өлкәлә башҡарылған эштәр буйынса тәжрибә менән уртаҡлашыу ойошторолдо.

Семинарҙа ҡатнашыусылар менән В. Ильенковтың «Ҙур юл» тигән романы буйынса конференция үткәрелде.

М. Жданова.

КҮСМӘ БИБЛИОТЕКАЛАР

Благовещен. Район библиотекаһы яҙғы баҫыу эштәре осоронда китаптарҙы киң колхозсылар массаһына еткереү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе файҙалана.

Библиотека райондағы эрелтелгән ун колхозға күсмә библиотека ойоштороп ебәрҙе. Шулай уҡ район библиотекаһы работниктәре ауыл библиотекалары мөдирҙәренә һәм яҙыусы Сталин премияһы лауреаттарының әҫәрҙәре буйынса уҡыусылар конференцияһы үткәреү өсөн конференцияла сығыш яһаусы уҡыусыларға ярҙам күрһәтәләр.

Лысенко исемендәге эрелтелгән колхозда библиотека работниктәре яҙыусы Мальцевтең «Бөтә йөрәктән» тигән романы буйынса конференцияға әҙерләнеүселәргә практик ярҙам күрһәттеләр ҙә инде.

Ҡалала райбиблиотека работниктәре һәр ай һайын уҡыусылар конференцияһы һәм әҙәби кисәләр уҙғаралар.

Ошо көндәрҙә В. И. Лениндең тыуыуына 81 йыл тулыуға арналған әҙәби-художестволы кисә уҙғарҙылар.

И. Меньков.

ЯҢЫ ТИРМӘН

Маҡар районында Ворошилов исемендәге эрелтелгән колхоз күптән түгел Стәрлетамаҡтан электр ярҙамы менән эшләй торған тирмән һатып алды. Тирмән ошо көндәрҙә эшләй башлай, ул сәғәтенә 4 центнер иген тартасаҡ.

З. Низамов.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 26 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары әҙерлек кәңәшмәһенең 26 апрелдә наүбәттәге ултырышы булды. Великобритания вәкиле Дэвис председателлек итте.

СССР вәкиле Громыко сығышының асылы буйынса өс держава вәкилдәре 26 апрелдә лә, 25 апрелдәге ултырыштағы кеүек үк, бер нәмә лә әйтә алманылар.

Совет делегацияһы етәксеһенең 25 апрелдә яһаған белдереүенә яуап бирә алмаҡ, АҠШ вәкиле Джессеп. Кореялағы ваҡиғалар йәнәһе Корея Халҡ Демократик Республикаһы ғәскәрҙәренең Көньяҡ Кореяға һөжүм итеүе менән барлыҡҡа килде, тигән иҫке, мәғәнәһеҙ, факттар һәм документтар менән күптән кире ҡағылған ялғаны ҡабатлауҙан да яҡшыраҡ нәмә таба алманы.

СССР вәкиле Громыко Джессеп белдереүенең мәғәнәһеҙ булыуын күрһәтте.

— Кореялағы ваҡиғалар, — тине Громыко, — Көньяҡ Корея марионет властәре һәм уларҙың Америка хужалары тарафынан барлыҡҡа килтерелде. Совет вәкилдәре, атап әйткәндә БМО-ла, был хәлдең дөрөҫлөгөн раҫлаусы тейешле документтар, карталар килтерҙеләр. БМО-ла был документтарҙы һәм был факттарҙы кире ҡағырға бер кем дә батырсылыҡ итә алманы. Бынан тыш, был документтарҙа ҡултамғалары булған кешеләр, степаға ҡыҫырыҡланғас, ошо документтарҙың авторҙары булып тороуҙарын танырға мәжбүр булдылар. Мин АҠШ хөкүмәтенең Кореялағы ҡайһы бер официаль вәкилдәрен күҙҙә тотам. Корея Халҡ Демократик Республикаһына АҠШ-тың Көньяҡ Кореялағы марионеткаларының һөжүменән һуң Америка ғәскәрҙәренең бер нисә көн үткәс тә Корея территорияһына баҫып инеүҙәре лә осраҡлы түгел. Америка авиацияһы беренсе көндәрҙә үк Корея Халҡ Демократик Республикаһының территорияһын бомбаға тота башланы, ә Американың ҡоро ер ғәскәрҙәре шулай уҡ беренсе көндәрҙә үк Корея территорияһына баҫып инделәр. Бындай хәрәкәттәр яһау өсөн уға әҙер булыу кәрәклеге асыҡ, әлбиттә.

Кореяла совет ғәскәрҙәре түгел, ә АҠШ-тан бер нисә мең километр алыҫлыҡтан килтерелгән Америка ғәскәрҙәренең булыуы фактын бер кем дә кире ҡаға алмай. Кореяла интервенцияны тормошҡа ашырыусы Америка ғәскәрҙәре Корея ҡалаларын һәм ауылдарын емерәләр, тыныс халҡты үлтерәләр, илде талайҙар. Кореяға ҡаршы агрессияны АҠШ хөкүмәте башланы. Американлылар, беҙ бер нисә тапҡыр күрһәткәнсә, Кореяны үҙҙәренең хәрби базаһына әүерелдереүҙе күҙҙә тотоп, баҫып алыу маҡсаттары менән Кореяға баҫып инделәр. Американлылар өсөн Кореяла бер нәмә лә юҡ, Корея халҡы үҙҙәренең эске эштәрен үҙҙәре хәл итергә тейештәр.

Джессептен, Советтар Союзы, йәнәһе, Кореяла тыныслыҡ урынлаштырыуға ҡаршы килде һәм ҡаршы килә, тигән белдереүенә ҡағылып, Громыко, мин инде бындай төр белдереүҙәрҙең мәғәнәһеҙлеген күрһәткәйнем, тип хәтергә төшерҙе. Корея мәсьәләһен тыныс юл менән яйға һалыуҙы көнбайыш державалар, бөтәһенән элек, Корея халҡына ҡаршы агрессияны тормошҡа ашырыусы АҠШ хөкүмәте өҙә. Советтар Союзына килгәндә, тип белдерҙе Громыко, минең тарафтан 25 апрелдә килтерелгән конкрет факттар күрһәткәнсә, тап бына Совет хөкүмәте Корея мәсьәләһен тыныс юл менән яйға һалыуға булышлыҡ итеү маҡсатында саралар күрҙе лә. Ләкин был аҙымдарҙы көнбайыш державалар хөкүмәттәре тарафынан һәм, бөтәһенән элек, Кореялағы үҙенең хәрби авантюраһын хәҙерге көнгә тиклем дауам иттереүсе АҠШ хөкүмәте тарафынан штык менән ҡаршыланды.

— Джессеп, — тип дауам итте СССР вәкиле, — Кореялағы һуғышта 16 илдең ғәскәри контингенттәре ҡатнаша, тигән һылтауҙар менән Американың Кореялағы хәрби интервенцияһын аҡларға маташа. Ләкин беҙ был илдәрҙең ниндәй икәнлеген һәм был ғәскәри контингенттәрҙең ниндәй икәнлеген яҡшы беләбеҙ; улар — Америка тышҡы политикаһына эйәреп барыусы илдәр. Уларҙың ҡайһы берҙәре Ҡушма Штаттарҙан тулы политик һәм экономик бойондороҡһоҙлоҡҡа эләктеләр. Бындай шарттарҙа АҠШ хөкүмәтенә был илдәргә үҙенең теләһә ниндәй ҡарарҙарын көсләп тағыуы ҡыйын түгел. Мәҫәлән, 1950 йылда Кореялағы ваҡиғалар башланғанда ошолай булды. Был ваҡытта Кореялағы хәрби интервенцияны тормошҡа ашырыу тураһында АҠШ хөкүмәтенең ҡарары Именселек Советы был мәсьәләне тикшереү өсөн йыйналғанға тиклем үк ҡабул ителде һәм, шулай итеп, Именселек Советы барлыҡҡа килгән факт алдына ҡуйылды. Ысынбарлыҡ бына ошондай. Улар алдын АҠШ вәкилдәренең белдереүҙәре үҙ көстәрен юғалталар.

Громыко сығышынан һуң Джессеп тә, Дэвис тә, Пароди ҙа һүҙ алырға теләмәне, был айҡанлы ултырыш ябылды.

* * *

ПАРИЖ, 27 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 27 апрелдә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең СССР вәкиле А. Громыко председателлегендә 39-сы ултырышы булып үтте.

27 апрелдәге ултырышта беренсе булып Великобритания вәкиле Дэвис сығыш яһаны. Уның сығышы өс делегация тарафынан 17 апрелдә индерелгән көн тәртибе проектын яҡлап ошо уҡ бер дәлилдәрҙе ҡабатлауға ҡайтып ҡалды, ул дәлилдәрҙең ялғанлығы һәм тулы нигеҙһеҙлеге СССР вәкиленең белдереүендә ышандырырлыҡ итеп асып бирелгәйне инде.

Унан һуң сығыш яһаған АҠШ вәкиле Джессеп, Дэвис тарафынан әйтелгән нигеҙһеҙ, иҫке «дәлилдәрҙе» ҡабатлап, Германияны демилитаризациялау тураһындағы үткер мәсьәләне артҡы планға ҡуйыусы һәм дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы проблеманы ҡарауҙы ҡоралланыуҙар кимәле тураһындағы мәсьәләне тикшереү менән алмаштырыуы, йәғни бөтә был эште буш, йөкмәткеһеҙ һөйләүҙәргә генә ҡайтарып ҡалдырыусы өс держава тәҡдимдәрен аҡларға маташты.

Франция вәкиле Пароди Дэвис менән Джессеп һөйләгән рухтағы кеүек үк һөйләне.

Өс держава делегациялары тарафынан 17 апрелдә көн тәртибенең үҙ проекттарына индерелгән үҙгәртеүҙәр һәм Джессеп менән Дэвис тарафынан яһалған белдереүҙәр айҡанлы үҙенең иҫкәртеүҙәрендә СССР вәкиле Громыко былай тине:

— Дэвис, әгәр ҙә Совет делегацияһы ҡоралланыуҙар тураһындағы мәсьәлә буйынса килешеүҙәр теләй икән, өс держава тәҡдимдәрен ҡабул итмәҫ өсөн уның нигеҙлектәре юҡ, тип белдерә. Ләкин был белдереү Дэвис тарафынан әйтелгән фекерҙе, атап әйткәндә, йәки өс держава формулировкаһын ҡабул итегеҙ, йәки был мәсьәлә буйынса килешеүҙәр булмаясаҡ, тигән фекерҙе тағы ла йәшеренгәнерәк формала әйтеү булып тора. Совет делегацияһы менән һөйләшеүҙәрҙең бындай методы ярашлы булып тормай, ул ыңғай һөҙөмтә бирә алмай, тип беҙ күрһәткәйнек инде.

СССР делегацияһы бындай мөһим мәсьәләнең ҡоралланыуҙар кимәле тураһындағы мәсьәлә менән алмаштырылыуы менән килешә алмай.

Германияны демилитаризациялау тураһындағы пунктҡа ҡағылып, Громыко былай тине:

— Был мәсьәләнең көн тәртибендәге [illegible] формулировкала индерелеүе[illegible] булыуы менән беҙ [illegible], көн тәртибендә уның ниндәй урын[illegible]ға тейеш булыуы тураһында килешм[illegible] әле, Совет делегацияһы элекке[illegible] был пункт көн тәртибендә Германияны демилитаризациялау тураһындағы [illegible]ләнең әһәмиәтенә ярашлы булған урын алып торорға тейеш, тип иҫәпләй[illegible] бына шуға күрә лә СССР делегацияһы был мәсьәләне артҡы планға [illegible] маташыуҙарға ҡаршы килә.

Өс держава вәкилдәре тарафынан ултырышта яһалған тәҡдим [illegible] тип дауам итте Громыко, Совет делегацияһы түбәндәгеләрҙе белдереүҙе [illegible] тип иҫәпләй:

— Беренсенән, тыныслыҡ [illegible]рына ҡағылған пунктҡа совет [illegible] держава вәкилдәренең ҡабул итер[illegible]дәләргә кәрәк. Килешелгән яңы [illegible]ровкала хәҙер был пунктта былай әйтелә: «Италия, Румыния, Болгария, Венгрия менән тыныслыҡ договорҙары, дүрт державаның Германия һәм Австрияға ҡағылған килешеүҙәре». Шулай көн тәртибенең был пунктының ре[illegible]һын килешелгән, тип иҫәпләргә [illegible]

Триест тураһындағы мәсьәлә[illegible]ған формулировка менән эш [illegible] тора. Өс делегацияның һуңғы тәҡдим[illegible] былай тип әйтелә: «Триестҡа ҡағылған өлөштә Италия менән тыныслыҡ [illegible]ры», формулировканың Италия [illegible] тыныслыҡ договорын үтәү тура[illegible] әйтелгән өлөшө өс делегация [illegible]рендә алып ташланған, һәм уҡ [illegible]ғына алып ташланмаған. Өс держава вәкилдәре Италия менән тыныслыҡ [illegible]рын үтәүгә ҡағылған һүҙҙәре [illegible]лап, был пункттың редакцияһын [illegible] үҙгәртеүҙәрен асыҡ әйтмәнеләр. Совет делегацияһы, сит ил эштәре министр[illegible] Италия менән тыныслыҡ [illegible] Триестҡа ҡағылған өлөшендә үтә[illegible]һындағы мәсьәләне ҡарағанда, [illegible] пунктты тағы ла асығыраҡ итеп [illegible] кәрәк, тип иҫәпләй.

Атлантик пакт тураһындағы һә[illegible] территорияларҙа Американың хәрби [illegible]лары тураһындағы мәсьәләгә [illegible] тип белдерҙе Громыко, Совет делегацияһы был мәсьәләгә үҙенең ҙур әһәмиәт [illegible]үенә һәм был мәсьәләне министрҙар ҡарауы кәрәк тип иҫәпләүенә [illegible]ва вәкилдәренең иғтибарын бер [illegible] тапҡыр йүнәлткәйне инде. Был [illegible] индермәгән теләһә ниндәй көн [illegible] беҙ ҡәнәғәтләнерлек тип таный алмай[illegible].

Кәңәшмә уңышһыҙ барып сыҡһа [illegible]ҡиғала яуаплылыҡ, йәнәһе, Совет [illegible] мәтенә төшәсәк, тип Дэвис тарафынан яһалған ишараға ҡағылып, Громыко былай тине:

— Кәңәшмә эше уңышһыҙ бул[illegible] ҡиғала яуаплылыҡтың кем өҫтөнә [illegible] тураһындағы мәсьәләне хәл итеү, [illegible] тә, Дэвис белдереүенә бәйләнмәгән [illegible] үҙебеҙҙең кәңәшмә осрағаа [illegible] тарҙы тикшерергә тейеш булыусыларҙы асыҡлаҙарҙар, тип ышанабыҙ.

Беҙҙең кәңәшмәбеҙгә ҡағылға[illegible] бер объектив күрһәткестәр, [illegible] факттар бар, улар Дэвистең теләһә [illegible] белдереүҙәренә ҡарағанда [illegible] ҡырға көслөрәк, тип белдерҙе [illegible] һүҙендә Громыко. Халҡтар кәңәшмәнең кемдең ғәйепле булыуын Дэвис белдереүҙәренә ҡарап түгел, тыныслыҡты [illegible]ға мөнәсәбәте булған айырым [illegible] проблемаларҙы ҡарауға ҡаршы килеүсе кешеләрҙең белдереүҙәренә ҡарап факттарға ҡарап хәл итәсәктәр.

СССР вәкиленең сығышынан һуң [illegible] вәкиле Джессеп ултырышты ябырға [illegible]дым итте.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 27 апрель. (ТАСС). Корея Халҡ Демократик Республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһе, бөтә фронттарҙа ла Халҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтарының частәре менән берлектә ҡаты һуғыш алып барыуҙы дауам иттерәләр һәм Америка-Англия интервенционистик ғәскәрҙәренә байтаҡ юғалтыуҙар яһайҙар, тип хәбәр итә.

Үҙәк фронтта Халҡ армияһының частәре лисынмансы дивизияны ҡамап алдылар һәм уға йәнле көстә һәм техникала ҙур юғалтыуҙар яһанылар. 1.045 кеше пленға алынды. Төрлө трофейҙар, шул иҫәптән 13 танк, 1.120 винтовка, 97 пулемет, төрлө калибрҙа 173 орудие һәм башҡалар ҡулға төшөрөлдө.

Демократик йәштәрҙең Бөтә Донъя Федерацияһының Мөрәжәғәте

БУДАПЕШТ, 25 апрель. (ТАСС). Хеҙмәтсәндәрҙең халҡ-ара байрамы 1 Май айҡанлы демократик йәштәрҙең Бөтә Донъя Федерацияһы (ВФДМ) Секретариаты Бөтә Донъя йәштәренә воззвание менән мөрәжәғәт итте.

ВФДМ бөтә илдәрҙең демократик йәштәрен яҡшы киләсәк өсөн, ныҡлы тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу өсөн, ҡоралланыуға, эшһеҙлеккә, көсәйә барған капиталистик эксплуатацияға ҡаршы, хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу өсөн көрәшергә саҡыра.

ВФДМ, тип әйтелә унан һуң воззваниела, бөтә донъяның йәштәрен — социалистарҙы, коммунистарҙы, католиктарҙы, протестанттарҙы, ойошҡан, шулай уҡ ойошмаған йәштәрҙең бөтә ҡатламдарын 1 Май көнөн хеҙмәтсән йәштәрҙең берҙәмлеге көнө, тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советының биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пакты төҙөүҙе талап итеүсе Мөрәжәғәтенә ҡул тамғалары йыйнау кампанияһының тағы ла күберәк киңәйеүенең башланғысы итеү өсөн бөтә нәмәне эшләргә саҡыра.

Иран хөкүмәтенең отставкаға сығыуы

ЛОНДОН, 27 апрель. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Тегерандан хәбәр итеүенә ҡарағанда, 27 апрелдә кис Иран премьер-министры Хосейн Ала үҙ хөкүмәтенең отставкаға сығыуы тураһында шаһҡа белдергән.

Төҙәтеү

ВКП(б) Өлкә Комитетының «Ш[illegible] районының МТС һәм колхозларында [illegible] баҫыу эштәрен үткәреүҙәге етешһе[illegible] тураһындағы» 1951 йыл 24 а[illegible] ҡарарының 8-се абзацында: «Ш[illegible] кияз МТС-ының Молотов, «[illegible] «Красноармеец» һәм «Большевик» [illegible]хоздары менән булған договор[illegible] парға һәреүҙе тамамлауҙың срог[illegible] июлгә билдәләнгән» тип яҙылған. «20 июнгә» тип төҙәтеп уҡы[illegible].

Редактор F. F. ҒАФ[illegible]

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һә[illegible] театрында — «ЯРҒАНАТ».

Рус драма театрында — «[illegible]ДӘР СЕМЬЯҺЫ».

«Октябрҙә» — иртән — «[illegible]БИТТОРЕ», кис — «ЯНИКА».

«Салауатта» — «БЫЛ [illegible] БУЛДЫ».

«Уралда» — «ЯНИКА».

Матросов исемендәге кино[illegible] «ПӘШЕРЕН МИССИЯ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлешө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02459 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы [illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

1951 йыл
№ 85 (8802)
1
МАЙ
шишәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

Йәшәһен совет халҡының һуғыштарҙа сыныҡҡан авангарды, беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы бөйөк коммунистәр партияһы, Ленин—Сталин партияһы!

Ленин байрағы аҫтында, Сталин юлбашсылығында — алға, коммунизм еңеүенә!

(ВКП(б) Үҙәк Комитеты саҡырыуҙарынан).

Иосиф Виссарионович СТАЛИН

ССР Союзы Хәрби Министре Советтәр Союзы Маршалы А. М. ВАСИЛЕВСКИЙ

ССР Союзы Хәрби-Диңгеҙ Министре Адмирал И. С. ЮМАШЕВ

ССР Союзы Хәрби Министренең ПРИКАЗЫ

1 май 1951 йыл — № 54 — Мәскәү ҡалаһы

Иптәштәр һалдаттар һәм сержанттар! Иптәштәр офицерҙәр һәм генералдар!

Бөгөн Совет Армияһы беҙҙең бөтә халҡыбыҙ менән бергә Беренсе Майҙы — хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара солидарлыҡ көнөн, бөтә илдәр эшселәренең туғандашлыҡ көнөн байрам итә.

Совет халҡы Беренсе Майҙы хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнөң бөтә өлкәләрендә лә күренекле еңеүҙәр менән ҡаршылай. Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә беҙҙең илебеҙ хеҙмәтсәндәре һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды уңышлы үтәнеләр һәм коммунистик төҙөлөштөң яңы еңеүҙәренә ышаныслы баралар.

Үҙ халҡына, Коммунистәр Партияһына һәм Совет Хөкүмәтенә икһеҙ-сикһеҙ бирелгән беҙҙең Армиябыҙ совет кешеләренең ижади хеҙмәтен һиҙгер һаҡлай.

Бөйөк Сталин тарафынан Совет Армияһы алдына ҡуйылған бурыстарҙы үтәп, ғәскәрҙәр боевой һәм политик әҙерлектә яңы уңыштарға өлгәштеләр.

Совет Армияһының бөтә личный составын Беренсе Май көнө менән ҡотлайым һәм һалдаттарға, сержанттарға, офицерҙәргә һәм генералдарға ғәскәри оҫталыҡты камиллаштыреуҙә, дисциплинаны нығытыуҙа һәм армияның боевой әҙерлеген күтәреүҙә артабан уңыштар теләйем.

Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамын билдәләп, приказ бирәм:

Бөгөн, Беренсе Майҙа, Тыуған илебеҙҙең башҡалаһы Мәскәүҙә, союзный республикаларҙың башҡалаларында, шулай уҡ Калининградта, Львовта, Хабаровскиҙа, Владивостокта һәм герой ҡалаларҙа: Ленинградта, Сталинградта, Севастополдә һәм Одессала егерме артиллерия залпы менән салют бирергә.

Йәшәһен беҙҙең Тыуған илебеҙ — Совет Социалистик Республикалар Союзы!

Йәшәһен бөйөк совет халҡы һәм уның данлы Армияһы!

Йәшәһен беҙҙең туған Совет Хөкүмәтебеҙ!

Йәшәһен Бөтә Союз Коммунистәр большевиктәр Партияһы!

Йәшәһен беҙҙең юлбашсыбыҙ, учителебеҙ һәм полководецебеҙ иптәш Сталин!

ССР Союзы Хәрби Министре
Советтәр Союзы Маршалы ВАСИЛЕВСКИЙ

ССР Союзы Хәрби-Диңгеҙ Министренең ПРИКАЗЫ

1 май 1951 йыл — № 35 — Мәскәү ҡалаһы

Иптәштәр матростар һәм һалдаттар, старшиналар һәм сержанттар!

Иптәштәр офицерҙәр, генералдар һәм адмиралдар!

Бөгөн беҙҙең Тыуған илебеҙҙең Хәрби-Диңгеҙ Флоты бөтә совет халҡы менән бергә **1 Майҙы** — хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамын байрам итә.

Ленин — Сталин партияһы тарафынан етәкселек ителгән совет халҡы беренсе май байрамын халыҡ хужалығын һәм культураны үҫтереүҙә, социалистик государство ҡеүәтен нығытыуҙа яңы өлгәшеүҙәр менән ҡаршылай.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды уңышлы үтәп, совет кешеләре коммунизм төҙөүҙең сталинсе программаһын ғәйәт ҙур энтузиазм менән тормошҡа ашыралар.

Совет хәрби моряктәре беҙҙең Ватаныбыҙҙың диңгеҙ сиктәрен һиҙгер һаҡлайҙар һәм **1 Майҙы** боевой һәм политик әҙерлектә яңы өлгәшеүҙәр менән билдәләйҙәр.

Иптәштәр матростар һәм һалдаттар, старшиналар һәм сержанттар!

Иптәштәр офицерҙәр, генералдар һәм адмиралдар!

Һеҙҙе хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамы — **Беренсе Май** менән ҡотлайым! Һеҙгә Советтәр Союзының Хәрби-Диңгеҙ Флотының боевой ҡеүәтен нығытыу эшендә артабан уңыштар теләйем.

Йәшәһен беҙҙең бөйөк Совет Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен героик совет халҡы һәм уның Хәрби-Диңгеҙ Флоты!

Йәшәһен беҙҙең туған Совет Хөкүмәтебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы Ленин—Сталин партияһы!

Йәшәһен беҙҙең бөйөк юлбашсыбыҙ һәм учителебеҙ иптәш Сталин!

ССР Союзы Хәрби-Диңгеҙ Министре
Адмирал ЮМАШЕВ

Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамы

Бөгөн Беренсе Май — бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең солидарлыҡ көнө, бөтә илдәр эшселәренең туғандашлыҡ көнө. Беренсе Май — *халыҡтар азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн, яңы тормош төҙөү өсөн көрәшеүсе көстәргә смотр көнө.* Был көндә бөйөк Советтәр Союзы халыҡтары айырыуса ҙур өлгәшеүҙәр менән ҡаршыланылар.

Май алды социалистик ярышы совет кешеләренең ижади инициативаһын, уларҙың үҙ социалистик Тыуған иленә, коммунистәр партияһына һәм һөйөклө юлбашсыбыҙ бөйөк Сталинға тәрән бирелгәнлектәрен яңы көс менән күрһәтте.

Совет халҡы Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә, халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планын уңышлы үтәүгә өлгәште. Биш йыллыҡ план заданиеларын тулыһынса һәм арттырып үтәп, беҙҙең илебеҙ большевиктәр партияһы етәкселегендә, бөйөк Сталин юлбашсылығында коммунизмға барыу юлында яңы ҙур аҙым яһаны.

Производство новаторҙары техниканы артабан камиллаштыреуға һәм уны тулыһынса файҙаланыуға бик күп энергия һалалар, хеҙмәттә яңы, тағы ла рационалыраҡ һәм юғары етештереүсәнлерәк алымдар ҡулланалар һәм техниканы, технологияны, социалистик производствоны ойоштороуҙы арымай-талмай алға табан алып баралар, производствоның культураһын күтәрәләр. Социалистик ауыл хужалығы эшсәндәре бөгөн колхоз ауылының тайпылышһыҙ үҫеүе, колхоздарҙың ойоштороу-хужалыҡ яғынан эрерәк-эре нығый барыуы, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планының һәм общественный малсылыҡтың өс йыллыҡ планының уңышлы үтәлеп килеүе, яҙғы сәсеүҙе оҙаҡ үткәреү тураһында рапорт бирәләр.

Беҙҙең илебеҙ коммунизм еңеүенә бара. Беҙҙең экономикабыҙ, илебеҙҙең ҡеүәте нығығандан-нығый. Был хәл беҙҙең хеҙмәтсәндәребеҙ тормошоноң материаль һәм культура кимәлен тағы ла күтәрә. Быйыл һуғыштан һуң өсөнсө тапҡыр массовый ҡулланыу тауарҙарына хаҡтарҙың арзанайтылыуы СССР халҡтарының көн-күрешен артабан күтәреүҙә мөһим саралар береһе булды.

Социалистик экономиканың һәм культураның үҫеүе, ҡыҙыу темптар менән илебеҙҙә коммунизмдең гигант ҡоролмалары төҙөлөүе, халҡыбыҙҙың материаль-тормош кимәленең күтәрелеүе, социалистик ҡоролоштоң капиталистик ҡоролошҡа ҡарағанда, ғәйәт юғары, үлсәүһеҙ дәрәжәлә өҫтөн икәнлеген күрһәтә.

Бөтә совет халҡы менән бергә беҙҙең республикабыҙ хеҙмәтсәндәре лә Беренсе Май байрамын ҙур уңыштар менән ҡаршы алдылар. Башҡортостан хеҙмәтсәндәре Советтәр Союзы халҡтарының дуҫ семьяһында йәшәп, партиябыҙҙың һәм хөкүмәтебеҙҙең, лично иптәш Сталиндең атайҙарса ярҙамы менән халыҡ хужалығының һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планын срогынан алда үтәнеләр. Бөгөн улар бөтә совет халҡы менән бергә үҙҙәренең морально-политик берҙәмлеген, совет патриотизмын, Тыуған илгә, коммунистәр партияһына, бөйөк Сталинға тәрән бирелгәнлектәрен һәм мөхәббәттәрен, коммунизмдең тантанаһын яҡынайтыу өсөн, бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн фиҙакәр көрәшкә һәр ваҡыт әҙер икәнлектәрен демонстрациялайҙар.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының Беренсе Май саҡырыуҙарын беҙҙең хеҙмәтсәндәребеҙ бөтә йөрәк менән ҡабул иттеләр һәм был саҡырыуҙар уларҙы халыҡ хужалығында ҡеүәтле яңы күтәрелеш, материаль көн-күреште һәм культураны артабан үҫтереү өсөн көрәшкә рухландыралар. Уларҙа социалистик ил халҡтарының, бөтә донъялағы тыныслыҡтың терәге — Совет иленең артабан нығыуы интересларын, бөтә ябай кешеләрҙең ихтыярҙарын һәм ынтылыштарын сағылдырылған.

Социализм һәм демократия өсөн көрәшеүселәрҙең көстәре үҫкәндән-үҫә килә, еңеүҙәр арта бара. Яңы демократия илдәре һәм бөйөк Ҡытай халҡтары социализм юлында ныҡ торалар. Империалистик һуғыш тоҡандырыусыларҙың өйрәнеүҙәренә ҡаршы көрәштә Европала һәм Азияла, Африкала, Австралияла һәм Америкала әлеге-әле киңерәк халыҡ массалары азатлыҡ өсөн, тыныслыҡ, демократия һәм социализм өсөн көрәшкә күтәреләләр. Тыныслыҡ һөйөүсе, берҙәм, бойондороҡһоҙ, демократик Германия өсөн, Югославияны фашистик режимдан ҡотҡарыу өсөн көрәшеүселәргә, Корея Америка оккупанттары уҡынан ҡотҡарыу, уның бойондороҡһоҙлоғо һәм именселеге өсөн, колониаль илдәрҙең азатлығы өсөн көрәшеүселәргә беҙҙең халыҡтарыбыҙ үҙҙәренең ҡайнар сәләмдәрен һәм нағыҙ теләктәрен ебәрәләр.

Үлемгә барыусы хәҙерге капитализм, Америка-Англия империализмы миллионлаған хеҙмәтсәндәрҙе ҡол итергә маташа. Ләкин ҡанға батҡан реакцияның ҡара көстәре нисек кенә бысраҡ юл менән дә был маҡсатҡа өлгәшә алмаҫтар. Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пакты төҙөү тураһындағы Мөрәжәғәткә инде миллиондарса кешеләр ҡул ҡуйҙы. Бөтә ер шарында тыныслыҡты һаҡлау тураһында иптәш Сталиндең **«Әгәр ҙә халыҡтар тыныслыҡты һаҡлау эшен үҙ ҡулдарына алһалар һәм уны аҙағына тиклем яҡлаһалар, тыныслыҡ һаҡлап алып ҡалыныр һәм нығытылыр»** тигән һүҙҙәре бөтә намыҫлы кешеләрҙе тыныслыҡ өсөн көрәшкә рухландыра, яңы көс бирә.

Коммунизм төҙөүҙең сталинсе бөйөк программаһын үтәй барып, Совет иле бөтә донъя хеҙмәтсәндәре өсөн уларҙың социализм һәм демократия өсөн көрәштәрендә ҡаҡшамаҫ маяҡ булып тора һәм еңеүҙәрҙән яңы еңеүҙәргә, коммунизм тантанаһына бара.

Данлы коммунистәр партияһы — беҙҙең илебеҙҙе яңынан-яңы еңеүҙәргә алып барыусы Ленин—Сталин партияһы халыҡтың бөйөк мөхәббәте менән солғанып алынған. Шуға күрә беҙ бөтә йөрәгебеҙҙән бөтә донъяла тыныслыҡ йәшәһен тип әйтәбеҙ.

Йәшәһен бөйөк Совет Социалистик Республикалар Союзы — бөтә донъяла тыныслыҡтың ҡаҡшамаҫ терәге!

Йәшәһен совет халҡының һуғыштарҙа сыныҡҡан авангарды, Ленин — Сталин партияһы!

Ленин байрағы аҫтында, Сталин юлбашсылығында — алға, коммунизм еңеүенә!

„Красная Башкирия" совхозы коллективының еңеүе

Асҡар. (Телефон аша). «Красная Башкирия» совхозы коллективы (директоры иптәш Сафронов, партия ойошмаһы секретары иптәш Балмов) Май алды социалистик ярышында ҙур еңеүҙәргә өлгәште.

Совхоз 30 апрелгә иртә культуралар сәсеүҙе һәм агас ултыртыуҙы тулыһынса тамамланы. Бөтәһе 8000 гектарҙан артыҡ майҙанда иртә культуралар сәселде һәм 70 гектар майҙанда агас ултыртылды.

Социалистик ярышта коммунист иптәш Даминдаров етәкселек иткән «Озерное» бүлексәһе беренселекте алды. Был бүлексә 2950 гектар майҙанда яҙғы сәсеү планын совхозда беренсе булып, 27 апрелгә үк тамамланы.

Баҫыу эштәрендә совхоздың трактористтәре юғары хеҙмәт үлгеләре күрһәттеләр.

Совхоз коллективы һуңғы культуралар сәсеү планын да срогынан алда үтәп сығыу өсөн көрәшә.

Ә. Йосафаров.

Һүҙ эштән айырылмай

Яңауыл станцияһы депоһының машинистәре, цех һәм комплекслы бригада коллективтәре 1 Май хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫып эшләйҙәр. Машинистәр нормаһынан тыш йөктәрсә тоннаһы йөк ташырға, техник тиҙлек заданиеһен сәғәтенә бер километрға арттырырға ҡарар иттеләр.

Коллективтың һүҙе эштән айырылмай. Машинист биш йөҙсө иптәш Воробьев нәүбәттәге рейсҡа китеү алдынан участка диспетчеры менән социалистик договор төҙөнө.

Хеҙмәттәшлек уңышлы һөҙөмтә бирҙе. Яңауыл станцияһынан Чернушка станцияһына машинист поезды графиктан алда килтерҙе һәм ярты тонна яғыулыҡҡа экономия яһаны, локомотивтың уртаса тәүлек йөрөшө нормаһын 25 километрға арттырҙы.

Шулай уҡ машинистәр Хөснетдинов, Күнгүров, Щепочкин һәм башҡа иптәштәр ҙә поездарҙы йөктәүҙең юғары күрһәткестәренә өлгәштеләр.

М. Уткин.

Өфөлә тантаналы йыйылыш

Кисә, Башҡорт государство опера театрында ҡала партия, совет һәм общественный ойошмалары вәкилдәренең Беренсе Майға арналған тантаналы йыйылышы булды.

Тантаналы йыйылышты ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты секретары иптәш Х. Мостафин асты.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының башында иптәш Сталин торған Политбюроһы составын почетлы президиумға һайлау тураһындағы тәҡдимде бөтә зал аяҡ өҫтө тороп көслө алҡыштар менән ҡаршыланы.

Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамы — Беренсе Май тураһында доклад менән ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш С. Сәетбатталов сығыш яһаны.

Йыйылышта ҡатнашыусылар ҙур күтәренкелек менән бөйөк юлбашсыбыҙ И. В. Сталинға ҡотлау хаты ҡабул иттеләр.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 106(8823)
1951 йыл
1
ИЮНЬ
йома

ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө Ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

БӨГӨН—БАЛАЛАРҘЫ ЯҠЛАУҘЫҢ ХАЛЫҠ-АРА КӨНӨ!

Совет халҡы был көндә һуғышҡа ҡаршы, тыныслыҡ өсөн, киләсәк быуындар—балаларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн көрәш лозунгылары аҫтында билдәләй. Совет кешеләре тыныслыҡ эше өсөн көрәштә үҙҙәренең ҡаҡшамаҫ ихтыярҙарын белдерәләр.

Тыныслыҡтың бөйөк байраҡсыһы иптәш СТАЛИНГӘ дан!

Советтәрҙең ойоштороу-массовый эшен яҡшыртыу өсөн

[illegible]

УРОЖАЙ ЙЫЙНАУ КАМПАНИЯҺЫНА ТӨҘӨК ЮЛДАР БУЛДЫРАЙЫҠ!

Республикабыҙҙа юл төҙәү айлығы бара. Государство әһәмиәтендәге был кампанияла республикабыҙ хеҙмәтсәндәре ҙур ойошҡанлыҡ менән башланылар. Улар урожай йыйнау сезонына төҙәк юлдар һәм күперҙәр булдырыу өсөн эшләйҙәр. Бик күп районда юл төҙәү буйынса хеҙмәт күрһәткестәре өлгәшелгән инде.

Юл төҙәү буйынса йәйелдерелгән социалистик ярышта Илеш, Саҡмағош, Бүздәк һәм башҡа бик күп районда алдынғылар иҫәбендә баралар. Был районда юл участкаларында көн һайын юл төҙәүҙә 600 — 900 эшсе һәм 180—210 йөккә тартыу көстәре ҡатнаша.

Газетабыҙҙың бөгөнгө номерында юл төҙәү алдынғыларының һәм мастерҙарының тәжрибәһе хаҡындағы хаттарын урынлаштырабыҙ.

Айлыҡ заданиеһен өлгөлә үтәү өсөн

Беҙҙең коллектив 287-се номерле юл эксплуатациялау участкаһының 5-се дистанцияһын хеҙмәтләндерә. Дистанция ҡарамағына ингән юлдың алыҫлығы — Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Ермолаевка ағына 30 километр. Был юлда йыл әйләнәһенә бик күп һанда транспорт йөрөй. Шуға ла уны һәр ваҡыт төҙәк тотоу буйынса беҙҙең коллективҡа айырыуса ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә.

Быйыл беҙҙең дистанциялағы юлды төҙәкләндереү буйынса план, үткән йылдарға ҡарағанда, байтаҡ ҙур. 10 километр оҙонлоғондағы юлға капиталь ремонт, 18 километр юлға ағымдағы ремонт үткәрергә һәм Ашҡаҙар йылғаһы аша һалынған күперҙе төҙәтергә тейешбеҙ. Был эштәрҙе башҡарыу өсөн 4250 кубометр ваҡ ҡырсын таш һәм 100 кубометр ағас материалдары сығарыу талап ителә. Беҙҙең коллектив бөтә был эштәрҙең 80 процентын юл төҙәү айлығында үтәргә йөкләмә алды. Айлыҡтың тәүге көндәренән үк беҙ үҙебеҙгә беркетелгән 4 колхоздың һәр ҡайһыһына эш планы бирҙек. Юл төҙәү айлығын ҙур әҙерлек менән ҡаршылау һөҙөмтәһендә, эш хәҙер күтәренке темп менән бара. Көн һайын юлда Стәрлетамаҡ машина-юл [illegible] ҡырсын таш ташыуҙа көн дә, уртаса, 14 автомашина ҡатнаша. Был механизмдарҙы беҙ тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн бөтә саралар күрәбеҙ. Ҡырсын ташты автомашинаға тейәү транспортер ярҙамында башҡарыла.

Беҙҙең юл дистанцияһында эшләү өсөн Ишембай ҡалаһының промышленность предприятиеләре беркетелгән. Юл төҙәү айлығы осоронда автотранспорт конторалары, үҙәк электр станцияһы автомашиналары актив ҡатнашалар. Ләкин Ишембай нефть эшкәртеү заводы етәкселәре юл төҙәүгә машиналар бүлеү тураһында бик аҙ хәстәрлек күрәләр әле.

Яҙ ағас ултыртыу осоронда юл буйына урман полосаһы ултыртыу буйынса ла ҙур эштәр башҡарылды. Бөтәһе 12 километр оҙонлоғондағы ерҙә ағас ултыртылды. Был эште «Ишембайнефть» тресының 3-сө номерле промыслаһы һәм монтаж-төҙөлөш контораһы коллективтары айырыуса яҡшы башҡарҙылар. Улар ултыртҡан ағастарҙың 90-95 проценте үҫеп бирҙе.

Айлыҡтың тәүге көндәренән үк Стәрлетамаҡ районының Карл Маркс исемен[illegible] лары ҡатнаша. Карл Маркс исемендәге колхоздың колхозсылары Р. Баширова, П. Заһитова һәм «Путь Сталина» колхозынан Е. Ефимова, А. Кутузова иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Ҡырсын таш ташыу буйынса Стәрлетамаҡ машина-юл станцияһының шоферҙары А. Мерзляков, А. Яковлев һәм Трифонов иптәштәр үҙҙәренең нормаларын 150—175 процентҡа үтәйҙәр. Трактористарҙан Надельшин һәм Степанов иптәштәр хеҙмәт көнөн тулыһынса файҙаланалар.

Беҙ юл төҙәү айлығы башланғандан бирле 7 километр юлға капиталь ремонт үткәрҙек, 3500 кубометр ҡырсын таш һәм 70 кубометр ағас ташыныҡ та инде. Күперҙе төҙәтеү буйынса ла ҙур эштәр башҡарылды. Дөйөм алғанда, бөтә был эштәр йыллыҡ юл төҙәү планының 70 процентын тәшкил итә.

Беҙҙең коллектив бирелгән планды арттырып үтәү һәм яңы урожай йыйнау кампанияһына төҙәк юлдар һәм күперҙәр булдырыу өсөн көрәшә.

Ф. Антошко,
юл төҙәү мастеры.

ҺӘР БЕР МИНУТ ИҪӘПЛЕ

Мин — шофер. Крупская исемендәге колхоздан Мишкә — Өрйәҙе юлына ваҡ таш ташыу өсөн килдем. Эш заданиеһе—сменала бер километр ерҙән 40 кубометр таш сығарыу. Задание еңел түгел [illegible] Минең эшем юл ремонтлаусыларҙың да, таш ватыусыларҙың да уңышлы эшләүенә бәйләнгән. Мин ни тиклем тиҙерәк һәм күберәк рейс яһаһам, беҙҙең колхоздың эш планы шул тиклем ҡыҫҡа срокта үтәләсәк.

Хеҙмәтте мин нисек ойошторам һуң? Ремонт участкаһына иртәнге сәғәт 6-ла килем. Таш тейәү 20 минут ваҡытты ала. Юлда 15 минут үтә. Ә бушатыу 5 минут эсендә башҡарыла. Төшкө аш ваҡытында артыҡ сәғәткә генә туҡталам һәм сменаны киске сәғәт 9-ҙа ғына та[illegible]

Эш процесында машинамдың механизмдәре тигеҙ ритм менән эшләүенә төп иғтибарҙы бүләм. Техник тәрбиәне ваҡытында үткәрәм һәм табылған дефектты урынында төҙәтәм. Сөнки ватыҡ машина — ул эш заданиеһен үтәмәйһең, коллективтың эшен өҙәһең, тигән һүҙ.

Мин хеҙмәтте сәғәт графигы нигеҙендә ойоштороу менән бергә, ағыулыҡҡа, ваҡытҡа экономия яһау өсөн көрәшәм. Эш темпын арттырыуҙа булған эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланам. [illegible] арҡала мин, юл төҙәү айлығының тәүге көндәренән башлап, смена заданиеһен 200 — 250 процентҡа үтәйем.

Ф. Саитов,
Мишкә районы, Крупская исемендәге колхоздың шоферы.

Юл төҙәүҙә өҙөклектәргә юл ҡуймаҫҡа

Шишмә районы хеҙмәтсәндәре урожай йыйнау кампанияһы башланғанға тиклем йыл һайын юл төҙәү һәм ремонтлау эше менән шөғөлләнә. Райондың күпселек колхоздары юл төҙәү айлығын быйыл да ҙур ойошҡанлыҡ менән ҡаршыланылар. Күп кенә юл участкаларында колхозсылар, был мөһим эштә актив ҡатнашып, ҙур хеҙмәт уңыштарына өлгәштеләр. Юл төҙәү айлығының тәүге аҙнаһында Дим йылғаһында күпер төҙөлдө һәм 10 километр юл ремонтланды.

Был эштә «Красный флот» һәм «Большевик» колхоздары ҙур хеҙмәт күрһәткестәре бирҙеләр.

Ләкин Шишмә — Ҡараяҡуп — Ибраһим ауылдары араһындағы юл участкаһында эшләргә тейеш булған «Правда» (председателе Ғәликәев) һәм «Заветы Ильича» (председателе Ғәбидуллин) колхоздары был мөһим эшкә ошо көнгә тиклем ныҡлап башламағандар әле. Бында эш үҙ ағышына ташлаҡылған. План үтәлмәй, ә ваҡыт юғарыла күрһәтелгән колхоз етәкселәренең ҡуҙғалыуын көтмәй.

«Правда» колхозы 500 кубометр ваҡ ҡырсын таш ташырға, ике километр юлға капиталь һәм ағымдағы ремонт үткәрергә тейеш. Ике күпергә ошо көнгә тиклем ремонт эше башланмаған.

График буйынса юл төҙәүҙә көн һайын 33 ат, 135 кеше һәм бер автомашина ҡатнашып 20—25 кубометр ваҡ ҡырсын таш ташырға тейеш. Ләкин бары 10—12 кубометр ғына таш ташыла.

Йәки «Заветы Ильича» колхозын алайыҡ. Юл төҙәү планы бында ла өҙөклектә. Ул 400 кубометр ҡырсын таш ташыу планын ни бары 15—20 процентҡа гена үтәгән. Ә 16 кубометр ағас материалдарын ташыу эшенә ошо көнгә тиклем тотонмаған да әле. Юл төҙәү эшендә эшсе һәм тартыу көстәре тулыһынса файҙаланылмайҙар. Айырым көндәрҙә был колхоздан юл төҙәү эшенә хатта 4-5 ат һәм 5-6 кеше генә эшкә сыҡҡан көндәр ҙә булды.

Юл төҙәү бригадаһы менән етәкселек итеү өсөн яуаплы кеше юҡ.

Район Советы исполкомы етәкселәре һәм юл бүлеге мөдире иптәш Перлушин колхоздарҙағы бындай сериоз етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә юнәлдерелгән конкрет саралар күрмәйҙәр.

А. Бәлзитов.

САҠМАҒОШ—БАҠАЛЫ ЮЛЫНДА

Саҡмағош—Баҡалы шоссе юлын төҙәкләндереү эштәре ҡыҙыу темп менән башланды. Уны төҙәкләндереүҙә 8 ауыл Советы ҡатнаша. Улар был мөһим кампанияны үҙ-ара социалистик ярыш нигеҙендә ойошторҙолар. Һәр бер колхоз һәм ауыл Советы үҙ-ара ярыша.

Юл төҙәү мастеры иптәш Бәҙретдинов үҙ участкаһында булған эштәрҙе айырыуса яҡшы ойошторҙо. Ул башҡарылған эштең сифатына иғтибар бирә һәм ентекләп тикшереп ҡабул итә.

Р. Яҡупов.

ҘУР БЕРҘӘМЛЕК МЕНӘН

Ҡанлра районы колхозсылары, юл төҙәү айлығына берҙәм ҡушылып, үҙ заданиеләрен срогынан алда тамамлау өсөн социалистик ярышҡа сыҡтылар. Айлыҡтың беренсе көндәрендә үк районда 400 кеше, 60 ат һәм ике автомашина юл төҙәү эшенә йәлеп ителде.

Эш әрелателгән «Трактор» колхозында (председателе иптәш Асылгәрәев) айырыуса яҡшы ойошторолдо. Бында беренсе көндә 50 кеше, 10 ат һәм бер автомашина эшләне. Эш менән колхоз председателе урынбаҫары иптәш Солтанов етәкселек итә.

Ғ. Ғәзизуллина.

СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШ НИГЕҘЕНДӘ

Ҡыйғы районының Ленин исемендәге колхозы члендәре, юл төҙәү эшенең мөһимлеген аңлап, айлыҡты срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш йәйелдерергә бөтә район колхоздарына мөрәжәғәт иттеләр.

Ленин исемендәге колхоз үҙ өҫтөнә алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәү өсөн көрәшә. Хәҙер юл эшендә колхоздың 200 члены, фиҙакәр эшләп, көн һайын заданиеләрен арттырып үтәйҙәр. Юл эшендә шулай уҡ 50 ат ҡатнаша.

Г. Ғибадуллин.

Өфө предприятиеләренең стахановсылары һәм новаторҙарынан бер төркөм.

Һүрәттә: (һулдан уңға) геофизик приборҙар заводы токаре Н. Корытов, яҙыу машиналары заводы слесаре В. Шелковников, телефон аппараттары заводы фрезеровщигы Р. Бабкаев, химия промышленносы заводының смена начальнигы Р. Хрусталева, Дим станцияһының поездар составителе М. Прокофьев һәм Өфө төҙөлөш ойошмаһының штукатурсылар бригадаһы бригадиры С. Липинский иптәштәр.

А. Черкинский фотоһы.

Иптәш Х. К. Ибраһимова Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле исемен биреү тураһында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Указы

Ижади эшмәкәрлегенә 30 йыл тулыу айҡанлы һәм Башҡорт драматургияһын үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн иптәш Ибраһимов Хәбибулла [illegible] Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле исеме бирергә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретары И. ИӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы, 28 май, 1951 йыл.

Колхоздарҙа төҙөлөш эштәре

Ваҡ колхоздарҙы эре коллектив хужалыҡтарға берләштереү колхоздарҙа төҙөлөш эштәрен киң йәйелдереү мөмкинлеген тыуҙырҙы.

1951 йылда райондың эрәйтелгән колхоздары тәү таштан типовой клубтар, стандарт торлаҡ йорттар, ферма бинаһы һәм склатар һала башланылар. «Ленин юлы» колхозында 17 кешенән торған даими төҙөлөш бригадаһы ойошторолдо. Бригада менән тәжрибәле төҙөүсе иптәш Шайәхмәтов етәкселек итә. Бригада ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Гоголев системаһында ҙур ордәк инкүбаторы һәм мәктәп бинаһы һалды. Колхозсылар йәйге төҙөлөш эштәре өсөн 600 фестметр ағас әҙерләнеләр һәм уның яртыһын урмандан ташып ҡуйҙылар. Район Советы исполкомы «Ленин юлы» колхозының 1951 йылда эшләнәсәк төҙөлөш планын раҫланы. Был планда мәктәп, клуб, 100 баш ат һыйырлыҡ конюшня һәм һарыҡтар, һыйырҙар өсөн торлаҡтар төҙөү күҙ алдында тотола.

Былтыр төҙөлөш сезонын уңышлы тамамлаған «Сөн» колхозы быйыл да ҙур капиталь биналар төҙөргә әҙерлек алып бара. 143 мең кирбес, 75 тонна әҙбиз бирә торған завод ҙурайтыласаҡ һәм механизациялаштырыласаҡ. Был завод йылына 250 мең кирбес етештерәсәк.

Төҙөлөш эштәре «Беренсе Май» колхозында ла йыл әйләнәһенә туҡталмай. Ауыл һәм колхоз төҙөлөшө бүлеге колхоздарға һәр яҡлап ярҙам итергә тырыша. Күптән түгел район үҙәгендә төҙөлөш бригадалары етәкселәренең ике аҙналыҡ курсы булып үтте. Бөтә колхоздар ҙа ферма биналары төҙөү проекты менән тәьмин ителделәр. Был биналарҙың күбеһе кирбестән һәм башҡа сыҙамлы төҙөлөш материалдарынан эшләнәсәк һәм шуға күрә 15 колхозда быйыл кирбес заводы һәм өс колхозда әҙбиз яндырыу ойоштороласаҡ.

Ә. Шәрәфетдинов,
Шаран район Советы исполкомы эргәһендәге ауыл һәм колхоз төҙөлөшө бүлеге мөдире.

Сәғәт графигы буйынса

Сәғәт графигы менән эшләү һәр бер трактористҡа һәр бер сәғәттә нисә гектар ер эшкәртеп, загонды нисә минутта әйләнергә кәрәклеге алдан уҡ белергә мөмкинлек бирә. Тракторист загонды әйләнгән һайын норманың үтәлешенә контроль яһай һәм артта ҡалыу белеһә, эштең темпын тиҙләтеү сараһын күрә.

Мин тракторист һәм учетчик ҡатнашлығында һәр смена өсөн график төҙөйөм. Был графикта эш ваҡытын дөрөҫ файҙаланыу күҙҙә тотола.

Сәғәт графигы менән эшләү трактористарҙың эшләп сығарыуҙарын бик ныҡ арттырҙы. ДТ—54 тракторында эшләүсе тракторист Рәис Кашапов тәүге көндәрҙә үк смена нормаһын 119 процентҡа еткереп үтәне. Трактористарҙан Ғәйнуллин, Хәлиҡов һәм Хәкимов иптәштәр ҙә смена нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр. Бригада үҙе хеҙмәтләндергән «1 Май» колхозында план буйынса 1100 гектар урынына 1193 гектар майҙанда сәсеү, 979 гектар майҙанда культивация үткәреп, 296 гектар майҙанда ужым тырматты. 500 гектар яҙғы һөрөү һәм 300 гектар пар ере һөрөүҙе үткәрҙе.

Беҙҙең бригада яҙғы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк МТС күләмендә беренселекте алып, үҙендә МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағын һаҡлап килә.

М. Зәйнетдинов,
Баҡалы районы Кәрәс МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры.

ПАР ҺӨРӨҮ ПЛАНЫ АРТТЫРЫП ҮТӘЛДЕ

Бозаяз районының «Яңы бүләк» колхозын Ишле МТС-ының иптәш Вәлиян Нагаев етәкселек иткән трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Бригада колхозда яҙғы сәсеүҙе агротехник сроктарҙа тамамланы. Хәҙер ул пар һөрә.

Трактористка Мәрйәм Шафиева һәм уның менән эшләүсе Шакир Усманов иптәштәр ДТ—54 тракторы менән норма буйынса көн һайын 8 гектар урынына 10-11 гектар пар һөрәләр. Улар 23 майға 15 ат көсле һәр бер трактор менән 490 гектар ер эшкәрттеләр һәм 510 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһанылар. Тракторист Сабир Хәлитов сменаһы ла заданиене арттырып үтәй.

Иптәш Нагаев бригадаһы 300 гектар пар һөрөү планын 23 майға 490 гектар итеп үтәне.

Ф. Әсәнов.

• • •

☆ Йомағужа. Райондың бик күп [illegible] колхоздары пар һөрөү планын үтәү алдынлығында торалар. Хөҙайбирҙин исемендәге [illegible] колхозда 200 гектар, «Алғаҙ» колхозында [illegible] 350, Салауат исемендәге колхозда буйынса [illegible] гектар пар һөрөлдө.

Ә. Исән

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партия йыйылыштарының ҡарарҙарын тулыһынса үтәү өсөн

Партия ойошмаһының эшен дөрөҫ һәм уңышлы ойоштороу өсөн уның етәкселәренән күп кенә конкрет эштәр талап ителә. Коммунистарҙы актив эшкә йәлеп итеү, партия йыйылыштарын яҡшы әҙерләп ваҡытында үткәреү, халыҡ араһында политик-тәрбиә эштәрен киң йәйелдереү — былар бөтәһе лә партия эшен ойоштороуҙың мөһим шарттары булып торалар. Былар менән бер рәттән, партия йыйылыштарында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлеүен тәьмин итеү партия ойошмаһының эшен тағы ла яҡшыртыуҙа айырыуса ҙур урын тота. Шуның өсөн дә партия ойошмаларының етәкселәре партия йыйылыштарында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың тулыһынса үтәлеүе өсөн систематик көрәш алып барырға тейештәр.

Октябрьский ҡалаһында тәүге партия ойошмаларының февраль, март айҙарында булып үткән отчет-һайлау йыйылыштары, үҙған йылдарға ҡарағанда, күпселек коммунистарҙың актив ҡатнашлығы менән үтте. Партия ойошмаһының эшен яҡшыртыу буйынса уларҙың күп кенә тәҡдимдәр индереүҙәре, һәр коммунистың үҙ ойошмаһының эше тураһында хәстәрлек күреүе Октябрьский коммунистарының политик яҡтан бик ныҡ үҫкәнлектәрен күрһәтте. Отчет-һайлау йыйылыштарында предприятиеларҙа партия-ойоштороу эшенең яңы уңыштарына өлгәшеүгә йүнәлдерелгән конкрет ҡарарҙар ҡабул ителде.

Тәүге партия ойошмаларының отчет-һайлау йыйылыштарында ҡабул ителгән был ҡарарҙар коммунистарҙың теләктәрен һәм ынтылыштарын тулыһынса сағылдырҙылар. Шуға күрә улар үҙҙәре ҡабул иткән ҡарарҙарҙы үтәүҙә актив ҡатнашалар.

Октябрьский ҡалаһының күп кенә [...]ге партия ойошмалары тап бына ошо[...] эшләйҙәр. Миҫал өсөн 2-се номерлы төҙөлөш управлениеһы партия ойошмаһын алырға мөмкин. Был ойошмала отчет-һайлау йыйылышы айырыуса ҡаты тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү аҫтында үтте. Коммунистар үҙҙәренең сығыштарында партбюро члендарын һәм уның секретары иптәш Ғимадовты партия сафтарын үҫтереүҙә, профсоюз, комсомол ойошмаларына етәкселек итеүҙә күп кенә етешһеҙлектәргә юл ҡуйыуҙары өсөн ҡаты тәнҡитләнеләр. Производствоның техник экономик күрһәткестәрен яҡшыртыу буйынса тейешенсә эш алып бармауҙарын күрһәттеләр. Был йыйылыштан һуң 3 ай ваҡыт үтте. Хәҙер 2-се номерлы төҙөлөш управлениеһы партия ойошмаһының эшендә ҙур ғына үҙгәрештәр күрергә мөмкин. Оҙаҡ ваҡыттар буйы артта ҡалған участка, тип һаналып килгән төҙөлөш управлениеһы, беренсе квартал планын срогынан алда үтәп, ҡаланың алдынғы предприятиелары сафына баҫты. Апрель айы планы был төҙөлөш управлениеһы буйынса шулай уҡ арттырып үтәлде. Икенсе номерлы төҙөлөш управлениеһында партия-ойоштороу эштәре лә байтаҡ яҡшырҙы. Производствола хеҙмәт өлгөләре күрһәтеүсе һәм общественный тормошта актив ҡатнашыусыларҙан — комсомол члены Гриньков һәм атаҡлы штукатурсы, ҡала Советы депутаты Фазлыева һәм башҡа иптәштәр партия сафына ҡабул ителделәр. Был ойошманың бөтә коммунистары ла общественный эштә актив ҡатнашалар, партия поручениеларын аныҡ үтәйҙәр. Партбюроның ҡандай етәкселеге һөҙөмтәһендә төҙөлөш управлениеһында комсомол һәм профсоюз эштәре лә байтаҡ яҡшыртылды. Икенсе номерлы төҙөлөш управлениеһы партия ойошмаһы эшендә булған уңыштар, был партия ойошмаһының секретары иптәш Торшиндың һәм партбюро члендарының отчет-һайлау йыйылышы ҡарарҙарын үтәүҙе дөрөҫ ойоштороуҙарының һөҙөмтәһе булып тора.

Октябрьский ҡалаһы тәүге партия ойошмалары эшендә бындай миҫалдар күп. Өсөнсө номерлы промысел партия ойошмаһы (секретары иптәш Шаһиәлиев), беренсе номерлы бораулау конторыһы партия ойошмаһы (секретары иптәш Идрисов) һәм беренсе номерлы промысел партия ойошмаһы (секретары иптәш Талайко) отчет-һайлау йыйылыштары ҡарарҙарын үтәүгә бөтә коммунистарҙы йәлеп итеү һөҙөмтәһендә үҙ эштәрендә күренекле уңыштарға өлгәштеләр.

Партия ойошмаларының отчет-һайлау йыйылыштары ҡарарҙарын уңышлы үтәүҙе ойоштороу буйынса ВКП(б)-ның ҡала комитеты күп кенә саралар үткәрҙе. Улар араһында, отчет-һайлау йыйылыштары тамамланыу менән үк, был йыйылыштарҙың йомғаҡтары буйынса үткәрелгән партия ойошмалары секретарҙарының инструктив кәңәшмәһе, яңы һайланған секретарҙар менән үткәрелгән теоретик семинар тәүге ойошмаларҙа партия эшен йәнләндереүҙә айырыуса ҙур роль уйнанылар. Отчет-һайлау йыйылыштары ҡарарҙарының үтәлешен тикшереү буйынса ҡала комитеты бер нисә ойошманың эшен тикшерҙе. Ә «Туймазынефть» трестының төҙөлөш-монтаж конторыһы, Туймазы территориаль-төҙөлөш управлениеһы һәм машина-прокат базаһы партия ойошмаларының отчет-һайлау йыйылыштарында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы үтәүҙе ойоштороуҙары тураһындағы отчеттары партияның ҡала комитеты бюроһында тыңланды.

ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитеты тарафынан үткәрелгән был саралар, тәүге партия ойошмалары отчет-һайлау йыйылыштарының ҡарарҙарын үтәүҙе тәьмин итеү менән бергә, ҡалала партия эшен тағы ла яҡшыртыуҙа ҙур әһәмиәткә эйә булдылар. Партияның ҡала конференцияһынан һуң партияның тәүге ойошмаларына етәкселек итеү эше тағы ла яҡшырҙы. Партия ойошмалары үҙ эштәрен производствоға ныҡ яҡынайттылар. Киң ҡатлам массаны бөйөк юлбашсыға биргән вәғәҙәне үтәүгә мобилизовать иттеләр. Һөҙөмтәлә нефть сығарыу, бораулау эштәре темпы айҙан-айға үҫә бара.

Х. Харисов,
ВКП(б) ҡала комитетының партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлеге мөдире.

Коммунистар—юғары урожай өсөн көрәштә ойоштороусылар

Яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа агротехник срокта үткәреп, беҙ колхозыбыҙҙа юғары урожайға ныҡлы нигеҙ һалдыҡ. Яҙғы баҫыу эштәренең уңышын, уға алдан яҡшылап әҙерләнеү һәм яҙғы сәсеү осоронда көстәрҙе эшкә дөрөҫ урынлаштырыу, материаль-техник резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу хәл итте.

Яҙғы баҫыу эштәре башланыр алдынан беҙ партия ойошмаһының асыҡ йыйылышын үткәрҙек. Йыйылышта партиялыҙ актив һәм агитаторҙар ҙа ҡатнашты. Унда сәсеүгә әҙерләнеүҙең йомғағы һәм баҫыу становтарында агит-массовый эште ойоштороу тураһындағы мәсьәләләр ҡаралды. Бригадаларға беркетелгән агитаторҙарға колхозсылар араһында массовый-политик эш алып барыу буйынса конкрет күрһәтмәләр бирелде.

Колхоз партия ойошмаһы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа агротехник срокта тамамлау өсөн күп кенә саралар үткәрҙе. Сәсеү осоронда хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуҙы тәьмин итеү өсөн айырым коммунистар яуаплы эш участкаларына беркетелделәр. Партия ойошмаһында иҫәптә торған 24 коммунистың 23-ө туранан-тура баҫыу эштәренең иң яуаплы участкаларына беркетелде. Коммунист иптәш Х. Латипов икенсе бригадала ат сәскесендә эшләне. Ул норма буйынса 4,5 гектар урынына һәр көн 5-6-шар гектар ашлыҡ сәсте. Был бригаданың тырышсылары С. Луҡманов, Ә. Нәжметдинов иптәштәр ҙә норма буйынса 4-әр гектар урынына, көн һайын 5—5,5 гектар ер тырматтылар.

Колхоз агротехнигы коммунист Ә. Нурғәлиев 1-се һәм 2-се баҫыусылыҡ бригадаларында агротехника талаптарының дөрөҫ үтәлешен тәьмин итеү менән бергә бригадирҙарға хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуҙа ярҙам күрһәтте. Был бригада иртә культураларҙы сәсеүҙе колхозда беренсе булып, юғары сифатлы итеп тамамланы.

Шулай уҡ коммунистарҙан К. Хәбибов, М. Шәйхуллин, Ф. Сәлимов һәм Б. Ғабдуллин иптәштәр ҙә колхозсыларға намыҫлы хеҙмәттең өлгөләрен күрһәттеләр. Яҙғы баҫыу эштәрен дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә беҙҙең колхоз яҙғы сәсеү планын районда беренсе булып тамамланы. План буйынса билдәләнгән 1493 гектар урынына 1580 гектар ашлыҡ сәселде.

Колхоз быйыл бойҙай сәсеүгә ҙур иғтибар бирҙе. Планда ҡаралған 755 гектар урынына 801 гектар бойҙай сәселде.

Колхозда юғары урожай өсөн көрәш киң йәйелдерелде. Бригадалар һәм айырым колхозсылар үҙ-ара ярышҡа сығып, арыштың һәр гектарынан 20, бойҙайҙан һәм һолонан иң кәмендә 15-әр центнер урожай үҫтереп алыуға өлгәшеүҙе үҙҙәренең бурыстары итеп ҡуйҙылар.

Хәҙер бөтә көс пар һөрөүҙе иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә тамамлауға, игендәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыуға йүнәлдерелде. Бер үк ваҡытта колхозда бесән сабыуға һәм урожай йыйнауға әҙерлек эштәре киң йәйелдерелде.

Колхозсыларҙың бөтә көсөн юғары урожай үҫтереп алыу, общественный малдарҙы етерлек тиклем аҙыҡ менән тәьмин итеү һәм ауыл хужалығы йылын уңышлы тамамлау өсөн көрәшкә мобилизовать итеү беҙҙең партия ойошмабыҙҙың төп бурысы булып тора.

Ә. Әминов,
Саҡмағош районы «II коммуна» колхозы партия ойошмаһының секретары.

Әсәләр йыйылышы

ВКП(б)-ның Ленин райкомы ҡатын-ҡыҙ кадрҙарын тәрбиәләү һәм үрләтеү буйынса планлы эш алып бара. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн политик һәм тәбиғи-фәнни темаларға лекциялар һәм докладтар ойоштора. Общественный политик тормошта һәм семьяла ҡатын-ҡыҙҙарҙың актив ҡатнашлығын тәьмин итеүгә йүнәлтелгән мәсьәләләр менән уларҙың йыйылыштары үткәрелә.

Һуңғы көндәрҙә райком әсәләрҙең ошондай йыйылыштарын үткәрҙе. Был йыйылышта 200-ҙән артыҡ әсә ҡатнашты. 1-се номерлы мәктәп директоры иптәш Власова «Семьяла һәм мәктәптә балаларҙы тәрбиәләү» тигән темаға доклад менән сығыш яһаны.

— Балалар — беҙҙең илебеҙҙең иң ҡиммәтле капиталы,—тине докладсы.— Балаларҙы тәрбиәләү беҙҙең өсөн иң мөһим эштәрҙең береһе. Беҙҙең балаларыбыҙ — илебеҙҙең буласаҡ граждандары, коммунизм төҙөүселәре. Бөйөк Тыуған илебеҙгә лайыҡлы булған граждандарҙы тәрбиәләүҙә ата-әсәнән ныҡышмалы эш талап ителә.

Эш һөйөүсән, ныҡ һәм татыу семья — балаға дөрөҫ тәрбиә һәм уның киләсәгенә дөрөҫ йүнәлеш бирә. Хеҙмәт һөйөүсән совет семьяһы балаларҙы дөрөҫ тәрбиәләүгә ғәйәт ҙур йоғонто яһаусы, характерлы һыҙат булып тора.

Ғәҙәттә, ҡайһы кешеләр яҡшыраҡ, ҡайһылары насарыраҡ эшләйҙәр. Хеҙмәт сифаттарының бындай төрлө булыуы, — тине иптәш Власова, — тәбиғәттән [...]лмәй, ә тормошта, бигерәк тә кеше[...] бала сағында тәрбиәләнеүенә бәй[...]. Беҙҙең балаларыбыҙ аҡ һөйәк итеп [...]ләргә ярамай. Балаҡай саҡтарынан [...]ларҙы ошоно, үҙҙәренең көсө етерлек [...] үтәргә өйрәтергә кәрәк. Эш[...] итеп тәрбиәләп үҫтерелгән бала өсөн хеҙмәт намыҫ, дан һәм батырлыҡ эше булып әүерелә. Беҙҙең барыбыҙға ла, — тине докладсы, — Ульяновтар семьяһынан үрнәк алырға кәрәк. Лениндең ата-әсәһе — эш һөйөүсән, тоғро хеҙмәт кешеләре — үҙ балаларын балаҡай саҡтан уҡ хеҙмәткә, тәртипкә өйрәткәндәр, уларҙың эшен әҙләкһеҙ күҙәтеп барғандар, уларға хеҙмәт дәрте биргәндәр. Шуға күрә уларҙың балалары ихтыярлы, тәртипле, халыҡты һөйөүсән булып үҫкәндәр. Лениндең бөтә хеҙмәтсән халыҡтың даһиы булып үҫеүендә уның ата-әсәһенең дә өлөшө бик ҙур.

Семьяла кешенең хеҙмәткә, обществоға, государствоға, халыҡ алдындағы бурысына ҡарашы, ғәҙәттәре, тойғолары тәрбиәләнә. Һәр бер ата һәм әсә балаһын үҙе өсөн генә түгел, бөтә совет обществоһы өсөн тәрбиәләй.

Баланы дөрөҫ тәрбиәләү өсөн, — тип тамамланы докладсы иптәш Власова,— ата-әсәләр мәктәп менән ныҡ бәйләнештә булырға тейештәр. Семьяла, мәктәптә һәм мәктәптән тыш алып барылған, бер маҡсатҡа йүнәлтелгән тәрбиә эше генә ыңғай һөҙөмтәләр бирә ала.

Доклад[т]ан һуң бик күп әсәләр бала тәрбиәләү тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар. Ватан һуғышында һәләк булған офицерҙың ҡатыны, «Ширпотреб» фабрикаһының стахановкаһы иптәш Антипина, аталары һәләк булыуға ҡарамаҫтан, балаларын тәрбиәләй һәм яҡшы уҡыта алыуы тураһында һөйләне. Уның ул саҡта 7-се класта уҡыған улы хәҙер институтты тамамлап, юғары квалификациялы специалист булды. 3 йәшлек ҡыҙы хәҙер 6-сы класта уҡый.

— Партияның, хөкүмәтебеҙҙең һәм иптәш Сталиндың беҙҙең балаларыбыҙ тураһындағы хәстәрлегенә яуап итеп, — тине иптәш Антипина, — беҙ уларҙы Тыуған илебеҙгә, партиябыҙға һәм иптәш Сталинға бирелгәндәр итеп тәрбиәләргә тейешбеҙ.

— Мәктәптең һәм семьяның бергә алып барған көсөргәнешле эше менән генә, — тине һуғышта һәләк булған офицерҙың ҡатыны иптәш Машкина, — балаларҙы коммунистик рухта тәрбиәләргә мөмкин. Ата-әсәнең авторитеты, уларҙың тоғролоғона, фиҙакәр хеҙмәтенә, үҙ бурыстарын намыҫ менән үтәүенә бәйләнгән.

Унан ары иптәш Машкина иренең һау сағында яҙған хаттары аша нисек итеп балаларын уҡыуға, йәшәүгә дәртләндереүе тураһында һөйләне:

— «Яҡшы ҡыҙҙар булып үҫегеҙ», тип яҙҙы ул, — тине иптәш Машкина, «Миңә һеҙҙең менән ғорурлана алырлыҡ булһын. Немецтарҙы яҡшы туҡмаған өсөн миңә 5 орден бирҙеләр, шулай булғас һеҙ ҙә, ҡыҙҙарым, минән ҡалышмағыҙ, яҡшы уҡығыҙ!» Балалар бер ваҡытта ла аталарының был һүҙҙәрен онотмайҙар. Хәҙер оло ҡыҙым бишенсе класта уҡый. Кесеһе 3-сө класҡа күсте. Улар һәр ваҡыт отлично билдәләренә генә уҡыйҙар. Мин үҙемдең балаларымды Тыуған илебеҙгә лайыҡ итеп тәрбиәләргә тырышам.

Уларҙан һуң сығыш яһаусы Алмаева, Шерстобитова, Хәбибуллина һәм Киселева иптәштәр ҙә балаларҙы тәрбиәләүҙә үҙҙәренең тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Әсәләрҙең был йыйылышы унда ҡатнашыусыларҙа ныҡ ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Улар ошондай йыйылыштарҙы регуляр үткәреүҙе һорап, тәҡдим индерҙеләр.

М. Ҡорбанғәлиева,
ВКП(б)-ның Ленин райкомы секретары.

Һуғышҡа ҡаршы, тыныслыҡ өсөн, балаларҙы яҡлау өсөн!

М. Әхмәтьянов фотоэтюды.

Бынан бер йыл элек, 1950 йылдың 1 июнендә ҡатын-ҡыҙҙарҙың халыҡ-ара демократик федерацияһы саҡырыуы буйынса беренсе тапҡыр балаларҙы яҡлауҙың халыҡ-ара көнө үткәрелде. 51 илдә бик киң үткәрелгән был көн балаларҙы яҡлау өсөн көрәш донъяһының бөтә намыҫлы кешеләренең теләктәренә яуап бирә икәнлеген һәм тыныслыҡ өсөн дөйөм хәрәкәттең бер өлөшө булып тора икәнлеген күрһәтте.

Ошо йылдың февраль айында ҡатын-ҡыҙҙар халыҡ-ара демократик федерацияһы Советының Берлинда булып үткән сессияһы 1951 йылда балаларҙы яҡлауҙың халыҡ-ара көнөн һуғыш ҡурҡынысын булдырмау, хәрби бюджеттарҙы ҡыҫҡартыу, балаларҙың тормош шарттарын яҡшыртыуға ассигнованиеларҙы арттырыу, уларҙың һаулыҡтарын һаҡлау, балаларҙы уҡытыуҙы һәм тәрбиәләүҙе демократиялаштырыу, мәктәптәрҙә, балалар матбуғатында, фильмдарҙа һәм радиола һуғыш пропагандаһын туҡтатыу лозунгылары аҫтында киң кампания рәүешендә үткәрергә ҡарар итте.

Ер шарының бөтә намыҫлы кешеләренең иғтибарын һәм активлеген балаларҙың һәм йәштәрҙең ғүмерен, һаулығын һаҡлауға һәм уларҙы демократик тәрбиәләүгә туплауға кәрәклеге тураһындағы мәсьәлә бер ваҡытта ла хәҙерге кеүек ошондай ҡырҡа торманы: Америка-Англия империалистары һуғышты ҡуҙғытыуҙан агрессияның туранан-тура эштәренә күстеләр. Улар Кореяның ҡалаларын һәм ауылдарын емереклектәргә әйләндерҙеләр, Корея халҡының меңдәрсә балалары етем ҡалды, ләкин Америка летчиктары үҙенең бойондороҡһоҙлоғон батырҙарса яҡлаусы был бәләкәй генә илгә бомбаларҙы яуҙырыуҙы һаман дауам итәләр.

Корея балаларының ҡаны һәм яфа сигеүҙәре өсөн, бәләкәй генә мәктәп балаларын тере көйөнсә яндырыуҙары, торлаҡтарҙы, мәктәптәрҙе һәм больницаларҙы емереүҙәре өсөн кешелек Америка һәм Англия баҫҡынсыларын һәм уларҙың ялланған лисынмаһы балаларын һис бер ваҡытта ла ғәфү итмәҫ.

Америка-Англия империалистары тарафынан тормошҡа ашырылған агрессия политикаһы капиталистик илдәргә, колониаль һәм бойондороҡло илдәргә хеҙмәтсәндәр балаларының хәлен ҡотолғоһоҙ насарлата.

Капитал илдәрендә балалар хеҙмәтен бик ҡаты эксплуатациялау, балаларҙың ҡараусыһыҙ ҡалыуҙары һәм хәйерселектә йәшәүҙәре үҫә, балаларҙың үлеүе арта. АҠШ-та, Англияла, Францияла, Италияла һәм башҡа буржуаз илдәрҙә хәрби бюджеттарҙы ҙурайтыу менән бер рәттән мәғариф, һаулыҡ һаҡлау эшенә, балаларҙы социаль тәьмин итеүгә ассигнованиелар ҡырҡа рәүештә ҡыҫҡара.

Капитализм илдәре хеҙмәтсәндәре балаларының ауыр һәм күңелһеҙ хәле фактарын йәшереп ҡалдырырға хатта буржуаз матбуғаттың да ҡулынан килмәй. Америка Ҡушма Штаттарында йөҙҙәрсә мең балалар ярым аслыҡта йәшәйҙәр, тратуарҙарҙа йоҡлайҙар, хәйер һорайҙар. Миллиондарса балалар үҙҙәренең ата-әсәләре менән бергә крысалар һәм паразиттар мыжғып торған водопроводһыҙ һәм канализацияһыҙ емерек аласыҡтарҙа һәм трущобаларҙа йәшәргә мәжбүр булалар. Георгия штатындағы, Атланта ҡалаһында, ошондай трущобаларҙа 137 мең кеше йәшәй.

Американың Федерейтед Пресс профсоюз информация агентствоһы Лос Анжелос ҡалаһында ошо йылдың 23 ғинуарында булған ваҡиға тураһында хәбәр итте. Һәр ваҡыт мохтажлыҡта йәшәгән дүрт бала әсәһе Сильвия Гоулдбергтан йорт хужаһы квартира хаҡы түләмәгән өсөн бүлмәне бушатыуҙы талап иткән. Ошоноң менән бергә йорт хужаһы Сильвияға һәм уның балаларына сиркәүҙәге таш скамьяларҙа йоҡларға мөмкин, тигән. Өмөтһеҙлектә ҡалған Сильвия үҙен-үҙе үлтергән.

Балалар хеҙмәтен эксплуатациялау «Американса йәшәүҙең» айырылғыһыҙ бер яғы булып тора. Американың балаларҙы һаҡлау лигаһы председателе Леонард Майо күптән түгел ошолай тип белдерҙе: «Донъялағы был бик бай илдә меңдәрсә балалар бөтә көн эш көнө буйына үҙҙәре өсөн бик ауыр булған эштәрҙе башҡаралар».

Америкала балаларҙы һаталар. «Дейли компас» газетаһы һәр бер штатта балаларға үҙҙәренә ҡарата айырым хаҡ билдәләйҙәр тип хәбәр итә. Балаларын аҫрай алмаған ата-әсәләрҙән балалар һатып алыу өсөн махсус агентство бар.

АҠШ-та мәктәп йәшендәге 6 миллионға яҡын бала уҡымай.

Һәр йыл һайын бер йәшкә тиклемге 100 меңдән дә артығыраҡ бала үлә. Негр балалары араһында үлем айырыуса ҙур процент тәшкил итә.

Балалар араһында енәйәт эшләү әҙәмһеҙ үҫә бара. Хәҙерге ваҡытта АҠШ-та, тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, һәр йыл һайын бер миллиондан да артығыраҡ бала енәйәт эшләү буйынса регистрациялана.

Англияла Грейвсендтағы (Кент) инглиз урта мәктәбе уҡытыусыһы М. Уайлстың образлы әйтеүенсә, «мәғариф эше сәғәттәре туҡмаҡлылар ғына түгел, балалар кире яҡҡа әйләнә башланылар». Англия халҡына «һәр бер бала өсөн бер тиң белем алыу мөмкинлеге» булдырыуға өлгәшергә, тип вәғәҙә биргән лейбористар үҙҙәренең вәғәҙәләрен үтәмәнеләр.

Әтгинзең Англия йәштәренә «мәңгелек эшләү» буйынса планының нисек торғанлығын түбәндәге фактарҙан асыҡ күрергә мөмкин. «80 мең йәш кеше. Бирмингамда йәштәрҙең тормошон тикшереү тәжрибәһе» тигән исем аҫтында сығарылған (Аллен һәм Эйвин издательствоһы, Лондон, 1950 йыл) официаль китапта Бирмингамдың халыҡ мәғарифы органдарының яҡын йылдарҙа талап ителә торған мәктәптәрҙә 24 мең бала өсөн урын әҙерләү мөмкин булмауы тураһында күптән түгел белдереү [illegible] әйтелә. Бирмингамдың енәйәт эштәрен ҡараусы ҡала судында һәр йыл һайын үҫмер балалар урлашыу һәм башҡа енәйәттәр өсөн хөкөм ителәләр. Шуның менән бергә уларҙың һаны йыл һайын 10-12 процентҡа арта бара. Йәштәрҙең 40 проценты карт уйнай йәки ат уҙыштырыу һәм эттәр сабыштырыу ваҡытында аҡса һалып бәхәс тоталар. Һәр бер етенсе йәш кеше эскелек менән шөғөлләнә. Ҡабаҡтарҙа 14-15-әр йәшлек ҡыҙҙарҙың һуштан яҙғансы эсеп иҫереү ваҡиғалары бик йыш осрай.

Англия мәғариф министры лейборист Томлинсондың белдереүенә ҡарағанда, төҙәтергә тейеш булған өс мең мәктәп урынына һуңғы йылда ни бары 61 мәктәп кенә төҙәлгән.

Француз буржуазияһы һәм уның ялсылары мәктәптәрҙә хеҙмәтсәндәрҙең балалары булыуҙы социаль бәлгөлек тип иҫәпләйҙәр.

Италияла туберкулез менән ауырыған 300 мең баланың тик 4 проценты ғына медицина ҡарауы һәм врачтар ярҙамы менән тәьмин ителгән. Илдең көньяҡ өлкәләрендә балалар араһында тиф, малярия һәм трахома бик көслө. Неаполдә үткәрелгән тикшереү мәғлүмәттәре буйынса ошо ҡалала йәшәүсе балаларҙың 30 проценты даими рәүештә аҙыҡ етмәүҙән яфа сигәләр, 75 проценты рахит менән, 38 проценты аҙ ҡанлылыҡ менән ауырый.

Колониаль илдәрҙәге балаларҙың тормошо ҡот осҡос һәм күңелһеҙ. Уларҙың 60 проценты 14 йәшкә тиклем дә йәшәй алмай, малайҙарҙың 85-90 проценты грамотаһыҙ ҡала, ҡыҙ балаларҙың уҡыуы тураһында хатта статистика ла алып барылмай.

Индияла балалар хеҙмәте мәрхәмәтһеҙ эксплуатациялана. Тропик ҡояшының ҡыйҙырғыс нурҙары аҫтында меңләрсә балалар сәй япраҡтары йыйнайҙар, иртәнән алып төнгә тиклем джут плантацияларында эшләйҙәр йәки келәм ептәрен бәйләйҙәр. Уларға 7-8 йәштән алып уҡ эшләргә тура килә. Илдә һәр йыл һайын аслыҡтан бер миллионға яҡын бала үлә.

Египетта ла балаларҙың хәле яҡшы[...]нан түгел. Ошо илдә булған француз журналисы Поль Бюр[...] «Комба» газетаһында «Египет бер [...] булуһың» ти[...]гән баш аҫтында [...]балалар сери[...] [...]балаларҙың хәленә [...] урынлаштырҙы. Бал[...] яҙа: «Бала[...] ғылымы, ул былай т[...] тиңләм йәгни [...] әшкә ярарлыҡ йәш[...] [...]ндай ҡарауһыҙ йәшә [...] етеүенсе бер [...] йөрөйҙәр».

Хәҙерге Японияла балалар бәхетһеҙ тормошта йәшәйҙәр. «Токио ниппон нигци» газетаһы күптән түгел, Японияла балаларҙы һаҡлау тураһында закон индереүгә ҡарамаҫтан «Йәшле тауар менән сауҙа итеү туҡтатылмай» тип яҙҙы.

Империалистар мәктәптәрҙе көсләп үҫеүгә милитаризациялауҙы үткәрәләр. Балаларҙы һәм үҫмерҙәрҙе сиркәү-милитаристик, полиция, скаут һәм башҡа фашистик ойошмалар сафтары менән солғап алалар. Империалистар радионы, киноны, матбуғатты, балалар китаптарын хатта уйынсыҡтарҙы ла милитаризация, балаларҙы һәм үҫмерҙәрҙе боҙоу, уларҙың оҫыҡ кеше күрә алмаусы, раса идеяһы рухы менән ағыулау ҡоралы итеп файҙаланалар.

«Лайф» журналының иҫәпләп сығарыуына ҡарағанда АҠШ-тың бары тик иң ҙур радио компанияһы ғына аҙна һайын эфирға 80 детектив радио тапшырыу яһайҙар. Америкала «Комикс» исеме аҫтында һәр ай һайын 60 миллион данала 250 балалар журналы сығарыла. Уларҙың биттәре гангстерҙар тормошона булған һәр төрлө кеше үлтереүҙәр, урлашыуҙарҙы яҙыу менән тулған.

Капитализм илдәрендәге миллиондарса балаларҙың тормошо ошондай. Кешелектең киләсәге өҫтөндә торған ҡурҡыныс бына ошондай.

Үҙ ваҡытында Парижда халыҡ-ара демократик ойошма вәкилдәренең балаларҙы яҡлауҙың халыҡ-ара кәңәш үткәреү буйынса төҙөлгән комитеттың саҡырыуы буйынса күп кенә илдәрҙә бик күп төрлө ойошмаларҙың вәкилдәрен берләштереп балаларҙы яҡлауҙың милли комитеттары төҙөлдө. Уларҙағы йәштәр, ҡатын-ҡыҙҙар, профсоюз ойошмалары хеҙмәтсәндәр балаларының хәлен тикшерәләр, [...] балалар, эшһеҙҙәр балалары файҙаһына сборҙар йыйнайҙар һәм кисәләр үткәреләр, амбулаториялар, балалар баҡсалары, мәктәптәр, спорт майҙандары һәм башҡаларҙы асыуға ҡарата саралар күрәләр.

Бөйөк Советтар Союзы балаларҙың бәхете өсөн, үҫеп килеүсе йәш быуынды демократик уҡытыу һәм тәрбиәләү өсөн көрәштә донъяның бөтә халыҡтары өсөн рухландырғыс өлгө булып хеҙмәт итә.

Совет государствоһы йәш быуынды тәрбиәләү эшенә средстволарҙы ҡыҙғанмай. Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең бюджетының 26,8 проценты социаль культура сараларын ассигновать итеүгә китә. Быйыл мәғариф эшенә генә лә 59 миллиард һум ассигновать ителә.

Беҙҙең илебеҙҙә дөйөм мәжбүри уҡыу тормошҡа ашырылды. Быйыл мәктәптәрҙә һәм урта махсус уҡыу йорттарында 37 миллион кеше уҡый. Мәктәптәр селтәре һәр йыл һайын һаман күбәйә бара. Бары тик Россия Федерацияһында ғына һуғыштан һуңғы биш йыл эсендә 6.700-ҙән артығыраҡ мәктәп төҙөлдө. Мәктәптәрҙең һуғышҡа тиклемге селтәре аяҡҡа баҫтырылды һәм уҙып кителде.

Совет илендә мәктәпкә тиклемге тәрбиә бик киң алға китте. Бары тик РСФСР-ҙа ғына 800 меңдән дә артығыраҡ баланы тәрбиәләүсе 16,5 меңдән дә ашыуыраҡ балалар баҡсалары бар.

Үҙған йылда 5 миллиондан да артығыраҡ бала йәйге һауыҡтырыу саралары менән солғап алындылар.

Беҙҙең балаларыбыҙ бик йәштән үк совет патриотизмы һәм интернационализм рухында, донъяның башҡа халыҡтары менән дуҫлыҡ һәм уларҙы ихтирам итеү рухында тәрбиәләнәләр.

Халыҡ демократияһы илдәре, азат ителгән Ҡытай, Германия Демократик Республикаһы, хатта һуғыш утында ла үҙенең балаларын хәстәрлек һәм иғтибар менән солғап алған демократик Корея Советтар Союзы тарафынан күрһәтелгән юл менән еңеүле алға баралар.

Тыныслыҡ өсөн хәрәкәт — хәҙерге замандың иң көслө һәм еңелеүҙе белмәгән хәрәкәт. Халыҡтарҙың тыныслыҡ[...] бойондороҡһоҙлоҡҡа, азатлыҡҡа ҡарата булған ихтыярын һындырырлыҡ көс [...].

«Тыныслыҡты көтмәйҙәр. Тыныслыҡты яулап алалар!». Был һүҙҙәр тыныслыҡ яҡлыларҙың Икенсе Бөтә Донъя конгресында ҡабул ителгән «Донъя халыҡтарына манифест»ҡа яҙылған. 250 миллиондан да артығыраҡ кеше биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ пакты төҙөү тураһындағы талапҡа үҙҙәренең ҡултамғаларын ҡуйҙылар инде.

Балаларҙы яҡлауҙың халыҡ-ара көнө тыныслыҡ өсөн көрәштең тағы [...] көнө булып торор. Халыҡтар балаларға уларҙың бала ваҡыттарын ҡайтарып алып бирерҙәр. Кешелек үҙенең киләсәген һаҡлап алып ҡалыр, бөтә прогрессив кешелектең юлбашсыһы, тыныслыҡ байрағын йөрөтөүсе бөйөк Сталиндың гениһе менән рухланған һәм уның ет[...] селтәрендә көрәшкән миллиондарҙың ихтыяры бының ышанысы булып тора.

Л. Дубровина,
РСФСР Мәғариф министры урынбаҫары.

Новаторҙарҙың һәм стахановсыларҙың алдынғы эш методтарын республикабыҙҙың бөтә предприятиеләрендә лә кулланайык!

☆ ☆

Инженер Ковалев методын өйрәнеү нигеҙендә

В. МОРОЗОВА—Өфө 8-се Март исемендәге тегеү фабрикаһының цех технологы

Беҙҙең коллектив, Тыуған илебеҙҙең башка предприятиеләре коллективтәре кеүек, халыкка киң кулланыу тауарҙары етештерә. Шуға ла беҙҙең алдыбыҙҙа айырыуса ҙур бурыстар тора. Атап әйткәндә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, ассортиментте көндән-көн киңәйтеү, продукцияның үҙенә төшеү хакын кәметеү, уның сифатын күтәреү — төп бурыстарҙың береһе. Уларҙы уңышлы үтәү ныкышмалы эш талап итә. Беҙ, бөтәһенән элек, инженер Ковалев методын өйрәнеүҙе һәм уны производствоға массовый индереүҙе ойоштороҙок.

Фабрикала ай һайын инженер Ковалев методын индереү буйынса махсус план төҙелә. Унда хеҙмәтте һәм эш урынын якшы, өлгөлө ойоштороу буйынса конкрет саралар билдәләнә. Фабрика стахановсыларының һәм илебеҙҙең новаторҙарының күренекле эш алымдарын өйрәнеү һәм кулланыу алып барыла. Был алымдарҙы беҙ, инженерҙәр, мастерҙәр, технологтар үҙебеҙ генә өйрәнмәйенсә, ә уларҙы һәр бер эшсегә еткереү өсөн тырышабыҙ.

Фабрикала 470 эш алымы өйрәнелде лә инде. Уларҙың 270-е производствоға индерелде һәм хәҙер уңышлы кулланыла. Һөҙөмтәлә стахановсыларҙың һәм коллективтең алдынғы эш алымдарын өйрәнеү һәм кулланыу иҫәбенә хеҙмәт етештереүсәнлеге 8,6 процентка күтәрелде.

7-се номерлы цехта Ғәйнетдинова һәм Кислухина иптәштәрҙең эш алымдарына хронометраж үткәрелде. Уларҙың икеһе лә бер үк операцияны бер үк машинала башкарып, икеһе ике сменала эшләйҙәр. Хронометраж һөҙөмтәһендә иптәш Ғәйнетдинованың операцияны, Кислухинаға карағанда, байтак кыҫка вакыт эсендә башкарғаны беленде. Ул смена эсендә өҫтәмә рәүештә 39 операция башкара. Иптәш Ғәйнетдинова үҙенең эш алымына иптәш Кислухинаны өйрәтте. Һөҙөмтә, әлбиттә, якшы. Ул элек смена заданиеһын 119—120 процентка үтәһә, хәҙер задание үтәлеше 125—130 процент тәшкил итә. Шундай үк хәл Шамонина һәм Никитина һәм башка иптәштәр менән дә булды.

Оборудованиеларға вакытында профилактик саралар үткәреү ҙур әһәмиәткә эйә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә үҙ машиналарыбыҙҙы социалистик һаклыкка алдык һәм уларҙың хеҙмәт итеү срогын оҙайтыу өсөн көрәшәбеҙ. Һөҙөмтә якшы. Уларҙың буш тороуҙары фабрикала 1190 кеше-сәғәттән 68 кеше-сәғәткә тиклем кыҫкарҙы. Тимәк, хеҙмәт етештереүсәнлеге артты, тигән һүҙ.

Хәҙер беҙҙең бөтә көс һәм энергия, хеҙмәт эшмәкәрлегебеҙ йыллык производство программаһын Сталинсе Конституция көнөнә үтәүгә йүнәлдерелгән. Быны беҙ һис һүҙһеҙ үтәрбеҙ.

Коллектив стахановсы завод өсөн

А. КАМИНСКИЙ—Өфө электр оборудованиеләре заводының стахановсы цехы начальнигы урынбаҫары

Беҙҙең алда заводты коллектив стахановсы заводка әүерелдереү бурысы тора. Уны үтәү өсөн коллектив үҙенә күтәренке йөкләмәләр алды. Октябрҙең 34 йыллығы көнөнә беҙҙең завод коллектив стахановсы завод булырға тейеш. Бынын өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлектәр бар. Был почетлы бурыс бер һүҙһеҙ үтәләсәк.

Заводтың күп кенә цехтары хәҙер коллектив стахановсы цех булыуға өлгәштеләр ҙә инде. Мәҫәлән, беҙҙең йыйыу цехын ғына алайык. Ул үҙенең программаһын айҙан-айға уңышлы үтәй. Продукцияның үҙенә төшеү хакын кәметеү, отлично сифатлы продукция етештереү буйынса ҙур уңыштар бар. Былар беҙгә еңел генә килмәнеләр. Бик күп көс һәм энергия һалырға тура килде. Стахановсы бригадирҙәр Сергеев, Охремович, Тищенко, Хәйретдинова һәм башка иптәштәр, Александр Чутких башланғысын белгәс, отлично сифатлы продукция етештереү тураһында йөкләмә алдылар. Улар артынан башкалар эйәрҙеләр. Юғары сифатлы продукция өсөн хәрәкәт башланды.

Һөҙөмтәлә цехтың күп кенә участкалары коллектив стахановсы һәм юғары сифатлы продукция етештереүсе участка булыуға өлгәштеләр.

Был уңыштарға өлгәшеүҙә цех агитаторҙарының роле ҙур. Агитаторҙарҙан Арон, Минаев, Крутов, цех начальнигы Дикань һәм башка иптәштәр эш башланғанға тиклем коллективте заводта, илебеҙҙә булған яңылыктар менән таныштыралар. Шул уҡ вакытта коллектив алдына конкрет бурыс куйыла, йә булмаһа төшкө ашка туктағанда, эш бөткәс кыҫка ғына информациялар үткәрелә. Был, коллектив өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

Бында минең дә, цех начальнигы урынбаҫары булараҡ, катнашлығым ҙур. Цехтың участкалары һәм бригадалары араһында агит-массовый һәм политик-тәрбиә эштәрен тейешле кимәлгә куйыу, коллективтең техник белемен күтәреү һәм башка мәсьәләләр өҫтөндә эшләйем. Һөҙөмтәлә беҙ даими рәүештә ҙур уңыштар менән эшләйбеҙ.

Алдынғы эш методтарын кулланабыҙ

Е. СУХОБАЙ—Өфө киже-мамык комбинаты тукыу фабрикаһының мастер ярҙамсыһы

Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә ойоштороу-техник саралар ҙур роль уйнай. Комбинатта технология процестарын камиллаштыреү, файҙаланылмаған эске резервтарҙы асыу буйынса ҙур эш үткәрелә. Эш темпын һаман арттыра барыуға был ныҡ ярҙам итә.

Новаторҙарҙың алдынғы эш методтарын производствола кулланыу беҙҙең эшкә ныҡ ярҙам итә. Иптәш А. Чутких өлгөһендә продукцияны тик отлично сифатлы итеп кенә етештереү өсөн киң йәйелдерелгән социалистик ярыш брак яһауҙы бөтөрҙө, 2-се һәм 3-сө сортлы продукциялар етештереүҙе кырка кыҫкартты. Хәҙер продукцияның 97—98 проценте беренсе сортлы итеп кенә етештерелә.

1951 йылдың I кварталында тукыу фабрикаһының мастерҙәре һәм уларҙың ярҙамсылары станоктарҙы көйләү буйынса алдынғы алымдарҙы өйрәнделәр.

Көйләүҙә булған иң уңайлы, техник яктан дөрөҫ булған алымдар иҫәпкә алынды һәм эшселәргә таратыла башланы.

Мин хеҙмәтләндергән коллективта 24 станок бар. Улар менән илевсе сменаларҙа Мостафин һәм Некрасов иптәштәр ҙә эшләйҙәр. Беҙ, өсәбеҙ бергә йыйылып, хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү, сырьены һәм материалдарҙы экономиялы тотоноу һәм продукцияның сифатын күтәреү буйынса байтак саралар төҙөнек. Мәҫәлән, беҙ станоктың әйләнеш тиҙлеген 210 урынына, 220-гә еткерергә булдык. Шул аркала һәр бер станок сәғәтенә 5,2 метр тукыма бирәсәк.

Минең бригада апрель айы планын 129, ә май айының 15 көнө планын 131 процентка үтәне.

Шулай итеп алдынғы эш методтарын кыйыу индереү беҙҙең хеҙмәтебеҙҙе һәм производство программаһын үтәү темпын байтак еңеләйтте.

Дүрт станокты хеҙмәтләндерәм

В. РОМАНОВА—Өфө кабель заводы волочильщицаһы

Миңә, кабель заводында эшләү осоронда, төрлө станоктарҙа эшләргә тура килде. Уларҙың якшыһы ла, насары ла — берләһе булды. Хәҙер мин 4 станок хеҙмәтләндерәм. Улар ил нәҙек тимер сыбык һуҙалар.

Һуҙыу — ул йыуан диаметрлы тимер сыбыкты нәҙек итеп эшләү. Ул — катмарлы ғына операция.

Шуға карамаҫтан мин, үҙемдең хеҙмәт етештереүсәнлегемде айҙан-айға ныкышмалы күтәрә барып, 5 айҙа 7 айлык норма үтәнем. Был уңыштар минең башымды әйләндермәнеләр, ә киреһенсә, улар яңы күрһәткестәргә генә рухландырҙылар.

Үҙең алда барып, иптәштәрең артта калһа, социалистик ярыштың төп мәғәнәһе бөтә. Шуға күрә лә мин үҙемдең иптәштәремә якындан торып ярҙам итәм, уларға алдынғы эш алымдарымды өйрәтәм. Һөҙөмтәлә улар ҙа алдынғылар сафына баҫа. Тип эшләгән кеше менән ярышыуы ла күңелле була.

☆ ☆ ☆

Өфө калаһы предприятие новаторҙарының һәм стахановсыларының йыйылышы

29 майҙа рус драма театры бинаһында Өфө калаһындағы промышленность һәм транспорт предприятиеләре новаторҙарының һәм стахановсыларының дөйөм йыйылышы булды. Унда каланың промышленность һәм транспорт предприятиеләрендә алдынғы эш методтарын производствоға индереү саралары каралды. Йыйылышта ВКП(б)-ның Өфө кала комитеты секретары иптәш Мостафин доклад менән сығыш яһаны.

Иптәш Мостафин үҙенең докладында Өфө калаһындағы промышленность предприятиеләре коллективтарының һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллык планды срогынан алда үтәүҙә ысын геройзм күрһәтеүҙәрен әйтте.

Партия һәм профсоюз ойошмалары етәкселегендә предприятие коллективтәре һуғыштан һуңғы биш йыллыкта ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Каланың 30 предприятиеһы биш йыллык план заданиеһын 3,5—4 йыл эсендә тамамланы. Улар араһында электр оборудованиеләре, кабель, телефон аппараттары, судноларҙы ремонтлау, химия промышленносе заводтары һәм башка предприятиеләр бар. Был вакыт эсендә бик күп стахановсылар һәм новаторҙар үҫеп сыктылар. 1950 йылда хеҙмәтсәндәр тарафынан 3 меңгә яҡын рационализаторлык тәҡдим индерелде. Уларҙың 1300-ө производствоға индерелеп, 8 миллион һумдан артык государство средствоһына экономия яһалды. 4 мең стахановсы биш йыллык заданиеһе 2-3 йылда тамамланы.

— Каланың промышленносе, — тине иптәш Мостафин, үҙенең докладын дауам итеп, — быйыл да уңышлы эшләй. Дүрт айлык производство планы арттырып үтәлде. Был уңыштарға промышленность һәм транспорт предприятиеләрендә социалистик ярышты киң йәйелдереү, техниканы тулыһынса файҙаланыу, стахановсыларҙың алдынғы эш методтарын производствоға индереү һөҙөмтәһендә өлгәшелде.

Докладсы цехтарҙы һәм заводтарҙы тотош стахановсы итеү эшенә айырыуса ныҡ тукталып, былай тине:

— Электр оборудованиеләре заводында дүрт цех коллективе техник-ойоштороу сараларын үткәреү, күп көс һалыуҙы талап иткән эш процестарын механизациялаштырыу, техниканы тулы куәтендә файҙаланыу өсөн рационализаторлык тәҡдимдәрен индереү, производство технологияһын систематик камиллаштереү һөҙөмтәһендә планды айҙан-айға арттырып үтәүгә өлгәште. һәм «Стахановсы цех» исемен яулап алыуға лайыклы булды. Бындай цех коллективтәре иҫкү машиналары заводында ла һәм башка предприятиеләрҙә лә бар. Ләкин, — тине докладсы, — уңыштар менән бер ротгән, беҙҙә етешһеҙлектәр ҙә бар әле.

Кайһы бер предприятиеләрҙә валовой продукция етештереү программаһы үтәлһә лә, төп сифат күрһәткестәре үтәлмәй. Продукция планда билдәләнгән ассортимент буйынса эшләнмәй. Һөҙөмтәлә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү планы өҙелә, продукцияның үҙенә төшеү хакы кәметелмәй. Был етешһеҙлектәрҙең төп сәбәбе — партия, профсоюз ойошмалары һәм предприятие етәкселәренең эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу буйынса эште етерлек тиклем йәйелдермәүҙәрендә, стахановсы методтарҙы производствоға индермәүҙәрендә һәм эшсе кадрҙарҙың квалификацияларын күтәреү буйынса эш алып бармауҙарында.

Һуңынан докладта тимер юлсыларҙың, төҙөлөш ойошмалары коллективтәренең һәм уларҙың етәкселәренең эштәренә анализ яһалды. Өфө тимер юлы бүлеге коллективендә һәм төҙөлөш ойошмаларында биш йыллык планды үтәүҙә уңышлыктар булһа ла, ҙур ғына етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Тимер юл бүлегендә поездарҙың хәрәкәт графигын боҙоу, брак яһау вакиғалары була. Быларҙың бөтәһе лә йөк йөрөтөүҙең үҙенә төшеү хакын кыйбатландырыуға килтерә.

Калала капиталь төҙөлөш эштәре киң йәйелдерелгән. Үткән йылда төҙөүселәр 80 миллион һумлык төҙөлөш-монтаж эштәре башкарҙылар. Улар алдында быйыл да ҙур бурыстар тора. 56 мең квадрат метр торлак майҙандары һәм культура-тормош учреждениеләре төҙөлөп, эксплуатацияға тапшырылырға тейеш. Төҙөүселәр араһында йөҙҙәрсә стахановсылар бар. Улар, техниканы тулы куәтендә файҙаланып, юғары хеҙмәт күрһәткестәре бирәләр.

Ләкин төҙөүселәрҙең эштәрендә етешһеҙлектәр ҙә юк түгел. Кайһы бер төҙөлөш предприятиеләре объекттарҙы эксплуатацияға тапшырыу срогын һуҙалар. Уларҙың төп сәбәбе социалистик ярышты етерлек кимәлдә ойоштормауҙа, стахановсы эш тәжрибәләрен производствоға индермәүҙә һәм материалдар менән тәьмин итеү буйынса ҙур төткарлыктар булыуҙа.

— Кала предприятиеләрендә булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн, — тине докладсы, — большевистик тәнкит һәм үҙ-үҙеңде тәнкитләүҙе көсәйтергә кәрәк. Беҙ социалистик ярышты киң йәйелдерергә тейешбеҙ. Каланың бөтә промышленность, тимер юл предприятиеләре, төҙөлөш ойошмалары биш айлык планды сифат һәм һан күрһәткестәре буйынса ла үтәргә, стахановсыларҙың эш методтарын өйрәнергә һәм производствоға индерергә бурыслылар. Улар йыллык планды срогынан алда арттырып үтәү өсөн төп нигеҙ булып торорҙар.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа бөтәһе 20 кеше сығыш яһаны.

Йыйылыш социалистик ярышты һәм стахановсы хәрәкәтте артабан йәйелдереү, хеҙмәт новаторҙарының эш методтарын производствоға индереү тураһында Өфө калаһындағы промышленность предприятиеләренә мөрәжәғәт кабул итте.

Йыйылыш ҙур политик күтәренкелек менән иптәш Сталинға котлау хаты кабул итте.

Тиҙләтелгән режимдә

В. ПУПЫКИН—Өфө паровоздар ремонтлау заводының токаре

Металл кыркыуҙа тиҙләтелгән режимде кулланыу өсөн мин мотор менән станокты тоташтырыусы кайышты икенсе көнән алыштырҙым, суппортка һәм артты бабкаларға ремонт яһаным. Ләкин уңышлы эшләү өсөн миндә белем етешмәй ине. Мине Мәскәүгә махсус курска ебәрҙеләр. Унда металлы эшкәртеү теорияһы буйынса байтак белем алдым. Мәскәү һәм Ленинград калаларының алдынғы предприятиеләрендә булдым. Леонидлар тыңлау, алдынғы кешеләрҙең эш тәжрибәләрен өйрәнеү миңә күп белем бирҙе.

Кайткас, мин үҙемдең «ДИП—300» маркалы станогыма тағы ла кайһы бер камиллаштереүҙәр индерҙем, эш урынын яңыса ойоштороҙом.

Металл кыркыуҙа тиҙләтелгән режимде кулланыу — ул һәр бер секундты тулы файҙаланыу, тигән һүҙ. Мин шулай эшләйем дә. Һөҙөмтәлә ҙур уңыштарға өлгәштем. Деталдәрҙе эшкәртеү вакыты кырка кәмене. Трофимов золотниген эшкәртеү өсөн 10 сәғәт вакыт кәрәк булһа, уны мин 2 сәғәт 14 минут эсендә эшкәртәм.

Тормоз подвескалары бармактарын эшкәрткәндә, станоктың әйләнеш тиҙлеген минутына 600-гә еткерҙем, эшкәртеү вакыты, нормаға карағанда, 7 тапкырға кыҫкарҙы.

Хәҙер заводта тиҙләтелгән режимдә металл кыркыусылар һаны 40 кешегә етә. Был әле аҙ. Тағы ла якшырак эшләргә мөмкин.

Металды тиҙләтелгән режимдә кыркыу методтарын эшселәр араһында таратыу бик мөһим. Ләкин уның менән завод, партия һәм профсоюз ойошмалары етәкселәре шөғөлләнмәйҙәр. Резецтар, эләккәсә, иҫке ысул — наждак менән кайралалар. Эш урындарын дөрөҫ ойоштороу буйынса ла бер нәмә лә эшләнмәй. Инструменттарҙы һаклау урындары станоктан алыҫ. Был етешһеҙлектәр менән завод администрацияһы ныклап шөғөлләнһә, уларҙы бик тиҙ бөтөрөп булыр ине. Ләкин, үкенескә каршы, завод етәкселәренең был турала хәстәрлеге юк.

Тиҙләтелгән метод менән эшләүселәрҙең һанын көндән-көн арттырыу, уларҙың эш тәжрибәләрен өйрәнеү, дөйөмләштереү, мөһим әһәмиәткә эйә. Беҙ үҙебеҙҙең бурысты Тыуған илебеҙ алдында намыҫ менән үтәйәсәкбеҙ.

Беҙҙең цех—тотош стахановсы цех

А. ПЕЧАТНОВА—Өфө витамин заводының стахановсыһы

Өфө витамин заводының синтез цехы һуңғы йылдарҙа үҙенең производство планын үтәмәй килде. Уның техник-экономик күрһәткестәре түбән булды.

Бындай хәлгә артык түҙеү мөмкин түгел ине. Һәм беҙҙең цех коллективе артта калыусанлыкты бөтөрөү өсөн көрәшкә күтәрелде. Цех яңы аппараттар менән байытылды.

1950 йылдың урталарында эшселәргә хеҙмәттә алдынғы стахановсы методтарҙы өйрәтеү башланды. Был хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, продукцияның үҙенә төшеү хакын кәметеүгә киң юл асты.

Үткәрелгән саралар цех коллективына төрәң өҙәклектән сығырға ярҙам итте. Бер оборудованиенан продукция алыу, 1949 йыл менән сағыштырғанда, 2-3 тапкырға артты.

Хәҙер бөтә эшселәр көндәлек, айлык нормаларын систематик арттырып үтәйҙәр, ә беҙҙең цех тотош стахановсы цех булып әүерелде. Ул һуңғы айҙарҙа заводтың күсмә Кыҙыл Байрағын үҙендә тота.

Ләкин әле беҙҙең эшебеҙҙә хеҙмәт етештереүсәнлеген һәм продукцияның сифатын күтәреү өсөн файҙаланылмаған резервтар күп кенә. Уларҙы тулыһынса файҙаланыу өсөн беҙ, социалистик ярышты киң йәйелдереп, стахановсыларҙың алдынғы эш методтарын производствоға кыйыу индерәбеҙ.

Кәңәшмәлә катнашыусыларҙан бер төркөм.

Һүрәттә: (һулдан уңға) тау оборудованиелары заводының күп станоктарҙы хеҙмәтләндереүсе стахановсыһы А. Суздальцев, кабель заводынан — бригадир В. Расскзова, прессовщица М. Морозова, бригадир Л. Шапникова һәм радиомеханика заводы слесаре Н. Никитин иптәштәр.

А Черинский фотоһы.

☆

Беҙҙең паровоз һәр вакыт якшы хәлдә

Н. ЛЫСЕНКОВ—Өфө паровоздар депоһының өлкән машинисы

Паровоз — катмарлы машина. Аҙ ғына боҙолоуҙың да паровозды ҙур аварияға йәки һәләкәткә килтереүе мөмкин. Шуға күрә лә беҙҙең 205—16-сы номерлы паровоз бригадаһы машинаны якшы хәлдә генә тота.

Авария осраклары бөтөрөү менән бергә, был яғыулыкка экономия яһарға ярҙам итә. Беҙ үткән йыл 9 ай эсендә 155, 571 мең, ағымдағы йылдың дүрт айында 112 мең 904 килограмм яғыулыкка экономия яһауға өлгәштек. Экономияланған яғыулыкка беҙ вагонлап айҙа биш тапкыр рейс яһайбыҙ.

Атаклы машинист Лунин методын киң кулланып, мин локомотивтең йыуыу-ара йөрөшөн дә оҙайтыуға өлгәшәм. Паровоз йыуыу-ара вакыт эсендә 5 мең километр юл йөрөргә тейеш. О беҙҙең бригада уны ике тапкырға арттыра.

Беҙҙең өлгәшелгән уңышлыктарыбыҙ өсөн паровозға «Иң якшы паровоз», ә миңә «Советтар Союзының иң якшы машинисы» исеме бирелде.

Мин был почетлы исемдә акլау өсөн киләсәктә тағы ла якшырак эшләү, яғыулыкка, материалдарға экономия яһау өсөн көрәшәм. Был хәҙер, илебеҙҙә коммунизм төҙөлөштәре йәйелдерелгән осорҙа, ҙур әһәмиәткә эйә. Беҙ быны якшы аңлайбыҙ. Быны беҙҙән халык, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин үҙе талап итә.

Профгруппорг А. Потапов өлгөһөндә

Н. МОРАТОВА—Өфө телефон аппараттары заводының шнуровщицаһы

1949 йылда беҙҙең участкала отлично сифатлы ике бригада ойошторолдо. Хәҙер бындай бригадалар һаны тағы артты. Улар үҙҙәренең өҫтәренә алған социалистик йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәп баралар.

1951 йылда беҙҙең участка 3 тапкыр «Отлично сифатлы участка» исемен яулап алды. Быға өлгәшеүҙә профгруппорг Анатолий Потапов өлгөһөндә эшләү ярҙам итте.

Мин етәкселек иткән профгруппала 3 бригада: шнурлау, кабель һәм гравирлау бригадалары бар. Уларҙа бөтәһе 25 профсоюз члены иҫәпләнә.

Беҙ, профгруппорг А. Потапов өлгөһендә, бөтә оборудованиеларҙы социалистик һаклыкка алдык, эш вакытында буш тороуҙарҙы бөтөрҙөк, стахановсылар мәктәбе ойоштороҙок.

Беҙҙең профгруппа члендары бер-берегенә ярҙам итәләр. Шуға күрә лә участкала норма үтәмәүселәр юк.

Былар беҙгә ағымдағы йылдың 4 айында 16 мең һумлык экономия яһарға мөмкинлек бирҙе.

Беҙҙең участка коллективенең был уңыштары — Тыуған илебеҙҙең артабанғы экономик ныгыуына һәм коммунизм төҙөү эшенә ныклы вклад.

Продукцияның ассортименте киңәйтелә

Н. НИКИТИН—Өфө радиомеханика заводы слесаре

1950 йыл радиомеханика заводы өсөн кырка һынылыш йылы булды. Ул был тиклем тик репродукторҙар ғына эшләп сығара ине. О үткән йыл уның профиле тамырынан үҙгәрҙе.

Заводтың йөҙө үҙгәреү менән, шулай уҡ уның кешеләре лә үҙгәрҙе, үҫте. Күп кенә эшселәр яңы эш методтары нигеҙендә эшләй башланылар. Һәм һәр кеше Тыуған илгә күберәк продукция биреүҙе үҙенең төп бурысы итеп һанай.

Завод коллективе материалдарҙы экономиялауҙа ла байтак кына уңыштарға өлгәште. Тик әле ағымдағы йылдың ғинуар, февраль айҙарында ғына ике тонна кара металға, 750 килограмм төҫлө металға экономия яһалды.

1950 йыл шулай уҡ минең өсөн дә һынылыш йылы булды. Мин ышаныслы рәүештә стахановсылар сафына баҫтым. Бер йылда өс йыллык план үтәлешо бирҙем.

Был уңыштарға мин эш вакытын дөрөҫ бүлергә өйрәнеү, эш урынын дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә өлгәштем.

Бынан тыш, бер нисә рационализаторлык тәҡдиме индерҙем. Мәҫәлән, каркас кул көсө менән сүкеш, кыҫау, быстүбер ярҙамында эшләнә ине. Мин бының өс штамп уйлап таптым. Был тәҡдим каркасты эшләү вакытын өс тапкырға кыҫҡарты. Ул

Беҙҙең завод коллективе алдында ... ҙергә вакытта яуаплы бурыс ... тор... аппарат эшләп сығарыуҙы үҙләштереү ... тора. ... буйынса

Тыныслыҡҡа арналған кисә

Республикабыҙҙың шағирҙары тыныслыҡ өсөн яҙылған байтаҡ әҫәрҙәр яҙҙылар. Улар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә беҙҙең совет кешеләренең тыныс хеҙмәттәрен һәм тыныслыҡ өсөн көрәштәрен данлайҙар. Бөтөн түгел Башҡортостан тарафынан сығарылған «Тыныслыҡты яҡлайбыҙ» тигән шиғырҙар йыйынтығына был әҫәрҙәр инде. Беҙҙең шағирҙарыбыҙҙың әҫәрҙәре тыныслыҡ өсөн хеҙмәт итә.

Был китапты ил ғүзәл ҡыҙҙары халҡтарҙың гениаль юлбашсыһына, тыныслыҡ өсөн бөйөк көрәш байрағын алып барыусы иптәш Сталинға арналған.

«Тыныслыҡ өсөн көрәштә совет Башҡортостаны әҙәбиәте» темаһына ошо көндәрҙә Өфәлә булып үткән әҙәби-музыкаль кисәлә республикабыҙҙың шағирҙары һәм йырсылары ҡатнашты, тыныслыҡты даулаусы шиғырҙарын уҡынылар. Тыныслыҡты яҡлаусы Идельсен йыйылышында ҡатнашҡан шағир Мостай Кәрим кисәлә сығыш яһап былай тине:

— Бөтөн кешелек тыуған ҡалаларҙа тыныс тормошта, тигәндәр. Ул замандар өсөн был ваҡытта ла шулай булған. Ләкин беҙ башҡа осорҙа йәшәйбеҙ. Беҙ хоҡуҡлыбыҙ ҙә беҙҙең байлыҡ... Беҙҙең совет ҡоралы кешелек донъяһының тыныслыҡ, бер шағирҙың тыныслыҡ алдынан ... Юҡ! Беҙ тыныслыҡ һаҡлаусы. Совет шағирҙарының иҫәп Ҡыҙыл Армияның хоҙайланғандары тораһа, беҙ беҙҙең боевой булып баҫырыға, инде подлинный шағир ярҙам итте. Сталинсе эпоха шағирҙары көрәшсе итте.

Мостай Кәрим үлемһеҙ коммунист Юлиус Фучик, төрөк шағиры Назым Хикмәт һәм башҡа бөтөр тураһында һөйләй.

— Беҙ, — ти Мостай Кәрим, — шағир, граждандар һәм көрәшсе сифаты органик рәүештә халыҡ менән нык тотанабыҙ. Беҙ осорҙа, бөйөк осорҙа йәшәйбеҙ. Шиңгә юҡ, тыныслыҡ өсөн бөйөк көрәштә беҙ еңеп сығасаҡбыҙ. Сөнки тыныслыҡ лагере башында иҫ тә китмәле совет халҡы тора. Һуғышты беҙ еңәсәкбеҙ. Сөнки тыныслыҡ өсөн көрәшселәр армияһының полководеце — бөйөк Сталин!

Был кисәлә шағир Ғәйнән Әмири, Әкрәм Вәли, Сәләх Кулибай, П. Куликов, Дауыт Юлтый, Назар Нәжми, В. Трубицын иптәштәрҙең тыныслыҡты даулаған ғорур һәм ҡыйыу һүҙҙәре яңғыраны.

Ишетә төн шағир Дуҙай буйы,
Тыңлай Миссисипи ярҙары,
Вива Сталин!
ти Рим,
Париж һәм Варшава майҙаны.
Сталинды кура барлыҡ донъя
Үҫенең тыныс, яҡты киләүен,
Тиҙрәп сафына баҫа
кәрәшерә
Ҡыуыр өсөн һуғыш һөрәмен!

Шағир Ғәйнән Әмириҙең был тыңлаусыларҙыҫ шиғыры ҙәнтәүлә сағырылыр булып йәшәргә тәнә зәлә.

Был кисәлә шағир Әкрәм Вәли, Талип Дәли, Назар Нәжми, П. Куликов, В. Трубицын, Шәриф Биҡҡол иптәштәр үҙҙәренең тыныслыҡҡа, бөйөк Сталинға арналған әҫәрҙәрен уҡынылар.

Кисәлә булысуслар шулай уҡ РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы М. Сәлиғәскәрова, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисты М. Хисмәтуллин һәм Д. Нуриәхмәтова иптәштәрҙең сығыштарын тыңланылар.

М. ТАЖИ

Тыныслыҡ—ул минең тормошом

Бүләрмәһен өсөн тул таушы
Балаларҙы тағы йоҡопан,
Тоҡанмаһын өсөн
фугас уты
Кешеләрҙең торған йортона;
Онотолһон өсөн, ер йөҙөнән
«Һуғыш»
«Ҡырылыш» тигән исемдәр.
Һәм булмаһын өсөн
аяҡ, ҡулһыҙ,
Ата-әсәһеҙ —
үкһеҙ етемдәр —
Беҙ даулайбыҙ
ергә тыныслыҡ,
Беҙ — дошманы
Ҡаны һуғыштың.
Мин,
Тыныслыҡ һүҙен әйткән һайын
Бик бәхетле тоям үҙемде.

Һулышым бар унда,
Эҫкән һыуым,
Гүзәллеген күрәм илемдең.
Ул — шишмәһе йырҙың,
Хеҙмәтем ул,
Күңелем көрәүе лә,
Яҙым да.
Мин,
кәс алам ошо изге һүҙҙән,
Тормош тәһен
һәр бер аҙымда.
Булмаҫ ине
йәшәүемдә бер йәм
Ватан, әгәр, булһа тыныслыҡһыҙ.
Шуның өсөн,
һауа, һыу шикелле,
Бик, бик кәрәк
Беҙгә тыныслыҡ!

Үҫ, балам

Бөгөн тағы ҡайттың бәбкәм
Баҡсанан,
Иәрәп, көләс, күңелдәрең
Шат һаман.
Өмөт нуры балҡып тора
Күҙеңдә,
Йөмдәр артып китте тағы
Өйөмдә.
Һайран өсөн тәлә ҡуңһан
Был йыл,
Игенәмә утыр балам,
Ил булдый.
Иҙ һөйләсе, тағы ниҙәр
Өйрәндең,
Нинди матур йырҙар йырлап
Килгәндең.
Һүҙҙәреңдең бөтәһен дә
Тыңлайым,

Әллә нисә һине күреп
Туймайым.
Истәремә төшөнә һин
Әҙемдә,
Дәртләр тоҡанғанын тоям
Көсемдә.
Күпме тәм бар бала тигән
Исемдә.
Үҫ алтынлым тара булып,
Үҫ гөлдәй,
Был телмәте ата-әсә,
Ил телә.
Ҡайнарлығы бар йөрәктә
Күңелдең,
Һинә бала, бар хөрмәте
Илемдең.

Карам Баһиров.

Плантацияла

Ҡырмыҫҡалы. Молотов исемендәге колхоздың шәкәр сөгөлдөрө үҫтереү мастеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Батырова быйыл да юғары урожай алыу өсөн көрәшә.

Плантация хәҙер йәм-йәшел. Үҫемлектәр инде өсәнсе пар япраҡтарҙы сығарҙылар.

Иптәш Батырова звеноһы Ленин орденле иптәш Фәрҙәнә Хәсәнова звеноһы менән ярыша. Сәсеүлектәр яҡшы тәрбиәләнә. Рәт араларҙы беренсе тапҡыр йомшартылды инде. Хәҙер үҫемлектәр һирәкләнделәр.

Н. Фәтхуллина.

Новаторҙар методын өйрәнеү

Ошо көндәрҙә Бәләбәй районы ауыл хужалығы бүлегендә наубәттәге «специалистәр көнө» йыйылышы булып үтте. Бында район агрономдары, зоотехниктәре, ветфельдшерҙәре һәм башҡалар ҡатнашты.

Йыйылышта ауыл хужалығы новаторҙары методын игенселектә ҡулланыу тураһында баш агроном Молодцов, был методты малсылыҡта ҡулланыу тураһында баш зоотехник Яковлев иптәштәр доклад яһанылар. Докладтар буйынса фекер алышыуҙарҙа сығып яһаусылар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Н. Николаенко.

Ҡ Ы Ҫ Ҡ А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р

Нарлыман шәкәр заводы базаһында мал һимертеү буйынса яңы совхоз ойошторолдо. Хәҙер төҙөлөш эштәре киң йәйелдерелде.

* * *

Кейәргәҙә спирт заводы базаһында мал һимертеү совхозы эшләй. Совхоз үҙған йылда планды арттырып үтәп, 150 мең һум файҙа алды.

Хәҙерге көндә тоҡом өсөн ярамһыҙ булған 300 баш мал һимертелә.

* * *

Ҡараяҡуб ете йыллыҡ мәктәбе (Шишмә районы) эргәһендә уҡыусылар көсө менән тәжрибә участкаһы төҙөлөп, 600 төптән ашыҡ төрлө емеш-еләк ағастары ултыртылды. Ултыртылған ағастар яҡшы үҫеп киләләр.

...ретик белемде практикала ҡулланыу ...уҡыусылар участкала үҫ ҡыҙыҡһы-...нән тәжрибә эштәре алып баралар.

Өфө районы Фрунзе исемендәге эрелә-телгән колхоздың һөтсөлөк-тауар фермаһы эргәһендә мәгеҙлә эре малдарҙы яһалма тороҡтороу пункты ойошторолдо. Ул был колхозды хеҙмәтләндереүҙән башҡа тағы ла күрше тирәләге колхоздарҙы ла спермалар менән тәъмин итәсәк.

В. Кондров.

* * *

Баймаҡ районы Карл Маркс исемендәге ауыл хужалығы артелендә күптән түгел колхоз үҙ средствоһы менән яңы магазин эшләтте һәм колхоз члендәре өсөн 12 өйләк бура һалды.

Фрунзе исемендәге колхозда 6 мең бот иген һыйҙырышлы яңы келәт һәм 100 баш мал өсөн стандарт торлаҡ төҙөү эше башланды.

Б. Дилров.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 29 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары әҙерлек кәңәшмәһенең 29 майҙа, СССР вәкиле А. А. Громыко председателлегендә, 63-сө ултырышы булып үтте.

Был ултырышта көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү юлында бер ниндәй ҙә алға барыу күренмәне. Сөнки көнбайыштағы өс держава вәкилдәре Атлантик пакт һәм Европаның күп кенә илдәрендә һәм Яҡын Көнсығышта Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә буйынса совет тәҡдимен ҡабул итеүгә нигеҙһеҙ, ныҡышмалы ҡаршы килеүҙәрен дауам иттерҙеләр.

Был ултырышта Дэвис менән Пароди-ҙең сығышы өс держава хөкүмәттәре тарафынан яһалған манёвр көн тәртибе буйынса килешеүҙе өҙөүгә һәм бер үк ваҡытта был өҙөү өсөн яуаплылыҡты СССР делегацияһына ауҙарырға маташыуға юнәлтелгән икәнлек фактын тағы ла бер тапҡыр раҫлау булып хеҙмәт итте.

Унан һуң Дэвискә һәм Пародиға яуап биреп СССР вәкиле Громыко сығыш яһаны.

А. А. Громыко сығышы

— Дэвис һәм Пароди, — тине Громыко, — йәнәһе Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә министрҙар Советы сессияһында тикшереү өсөн ярамһыҙ булып тора, сөнки, уларҙың һүҙенә ҡарағанда, Атлантик пакт һәм уның нигеҙендә государстволарҙың Төньяҡ-атлантик группировкаһын төҙөү Европала йәшәгән киеренкелектең сәбәбе түгел, ә эҙемтәһе булып тора, тип белдереп, беҙгә таныш булған йырҙарҙы яңынан йырланылар. Ләкин бындай төр белдереүҙәр мәсьәләнең дөрөҫ хәлен боҙалар, фактлар Атлантик пактты төҙөү һәм государстволарҙың Төньяҡ-атлантик блогын ойоштороу Европалағы халыҡ-ара киеренкелектең серьёз сәбәбе булып хеҙмәт итеүен күрһәтәләр. Көнбайыш державаларҙың делегациялары, был киеренкелек Төньяҡ-атлантик пакттың эҙемтәһе булып тормай, тип раҫлайҙар. Былай айырымлыҡ булһа ошо мәсьәләне министрҙар Советы сессияһында тикшереү тәҡдиме менән ризалашыу һәм, һуңғы сиктә, был мәсьәләне килешелмәгән мәсьәлә сифатында министрҙар Советына тапшырыу тураһындағы тәҡдим менән ризалашыу яҡшы булыр ине. Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә буйынса беҙҙең тулыһынса нигеҙләнгән тәҡдимдәребеҙҙе ҡабул итеүҙән ныҡышмалы баш тартып, АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре шуның менән үҙҙәрен государстволарҙың был агрессив Төньяҡ-атлантик блогын ойоштороусылар итеп фашлайҙар.

Өс держава вәкилдәренең йәнәһе Төньяҡ-атлантик пакт «оборона» характерындағы пакт, тигән көлкөлө раҫлауҙарына ҡағылып, Громыко, бындай белдереүҙәр күренеп торған фактарға ҡапма-ҡаршы киләләр, тип күрһәтте.

СССР вәкиле унан әры өс делегацияның үҙ позицияларын яҡлап килтергән бөтә дәлилдәренең ялғанлығын күрһәтте.

— Совет хөкүмәте, тип дауам итте Громыко, түбәндәге бәхәсһеҙ фактлан сығып эш итә, Атлантик пактты төҙөү һәм Американың хәрби базаларын булдырыу Европала барлыҡҡа килгән халыҡ-ара киеренкелектең төп сәбәбе булып тора. Өс держава хөкүмәттәре был мәсьәләне министрҙар Советы сессияһында тикшереүҙе теләмәйҙәр икән, тимәк, улар Европала йәшәгән киеренкелекте бөтөрөргә теләмәйҙәр, ә үҙҙәренең агрессив маҡсаттарында уны һаҡлап алып ҡалырға ынтылалар.

Өс держава хөкүмәттәре, был мәсьәләне ҡарауҙан баш тартып, күрәһең, беҙҙең кәңәшмәне Атлантик пакт нигеҙендә ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу, Американың хәрби базаларын төҙөү һәм Германия милитаризмын ҡабаттан тыуҙырыу буйынса үҙ сараларын үткәреү өсөн тәтен шаршауы сифатында файҙаланырға теләйҙәр, тигән һығымта яһау өсөн беҙҙең бөтә нигеҙләктәребеҙ бар. Өс держава делегацияһының килеп тыуған хәлдә янылыш күрһәтергә маташыуына ҡарамаҫтан, бөтә донъя общественносе фекере беҙ кәңәшмәлә осраған ҡыйынлыҡтарҙың ысын сәбәптәрен аңлаясаҡ, тип иҫәпләү өсөн беҙҙең шулай уҡ бөтә нигеҙләктәребеҙ бар.

Дэвистең, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы пункттан башҡа әҙерлек тәртибендә көн тәртибенә индерелеүгә билдәләнелгән ҡалған мәсьәләләр министрҙар Советы сессияһын саҡырыу өсөн база булып торалар, тигән раҫлауының нигеҙһеҙлеген Громыко асыҡ күрһәтте.

— Эштең асылы шунан тора, — тип белдерҙе СССР вәкиле, — Европалағы киеренкелектең һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙең насарайыуының төп сәбәбе булып Атлантик пактты төҙөү һәм сит территорияларҙа Американың хәрби базаларын булдырыу тора. Тап бына шуға күрә беҙ, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне тикшереү кәрәклеге хаҡында килешмәһәк, сит ил эштәре министрҙәре Советын саҡырыуҙың мәғәнәһе юҡ, тип иҫәпләйбеҙ. Халыҡты алдауға беҙ ҡаршы киләбеҙ. Беҙ министрҙар Советы сессияһының Европалағы обстановканы йомшартыуға һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға ҡағылышлы булған ысынлап та мөһим һәм үткер проблемаларҙы тикшереү яғында торабыҙ. Ябай, логик, тыныслыҡты яҡлау интерестәренә яуап биреүсе беҙҙең позициябыҙҙың халыҡтар тарафынан дөрөҫ аңланылыуында беҙ шикләнмәйбеҙ.

Бынан шуны әйтергә кәрәк, тине йомғаҡлау һүҙендә Громыко, беҙҙең кәңәшмә уңышһыҙлыҡҡа осраһа, бының өсөн яуаплылыҡ килешеүгә өлгәшеүгә ҡамасаулыҡ итеүселәргә, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне министрҙар Советы сессияһында ҡарауға ҡаршы килеүселәргә төшәсәк.

* * *

Унан һуң Джессеп һүҙ алды. Ул совет делегацияһы позицияһын яҡлап әйтелгән СССР вәкиленең дәлилдәренең асылы буйынса бер нәмә лә әйтә алманы. Был дәлилдәрҙе кире ҡағырға көсөнән килмәгәс, АҠШ вәкиле үҙ-үҙен тота алмайынса СССР политикаһына ҡаршы яла яғып һөжүм итте.

Джессепкә яуап биреп, Громыко былай тине:

— Джессеп, бер яҡтан совет делегацияһы менән һәм икенсе яҡтан көнбайыштағы өс держава делегациялары араһындағы айырмалыҡтың асылына ҡағылмайынса тиерлек һөйләргә батырсылыҡ итә. Ул күрәһең, үҙ позицияһының сайҡалып тороуын иҫәпкә алып, был айырмалыҡтың асылын ситләтеп үтә. Уның бөгөнгө бәйләнешһеҙ белдереүен тик ошо нот менән генә аңлатырға мөмкин. Ул үҙ-ара бер ниндәй логик бәйләнешһеҙ күп кенә темаларға ҡағылды.

— Кореялағы һуғыш хәрәкәттәрендә, тине унан әры Громыко, Советтар Союзының ҡатнашмауы, шул уҡ ваҡытта Америка ғәскәрҙәренең ҡоралды интервенцияны тормошҡа ашырып, Корея территорияһында булыуы бөтә донъяға билдәле. Дөрөҫ, америкалыларға Кореялағы был агрессия ҡыйбатҡа төштө. Мин кисә генә генерал Брэдлиҙең сенат комиссияһында, был авантюра һөҙөмтәһендә 140 мең америкалы йәки үтерелгән, йәки яраланған, тигән белдереүен уҡып сыҡтым. Был тик АҠШ штабының официаль хәбәре генә. Америка халҡының был авантюра өсөн бик ҡиммәт түләүе асыҡ һәм АҠШ хөкүмәтенә, уның вәкилдәре ниндәй генә алымдар ҡулланһалар ҙа, шул иҫәптән Советтар Союзы вәкиле ҡатнашҡан кәңәшмәлә быны эшләп ҡараһалар ҙа, уны аҡлауы бик ҡыйын буласаҡ.

— Джессеп, — тип дауам итте Громыко, — йәнәһе СССР Корея мәсьәләһен тыныс юл менән яйға һалыуҙы блокировать итте, ә бында, кәңәшмәлә көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеүҙе блокировать итә, тип белдереп, Кореялағы ваҡиғаларҙан күпереп министрҙар Советы өсөн көн тәртибен эшләргә саҡырылған беҙҙең кәңәшмәгә күсерергә ҡарар иткән. Ләкин тап бына Советтар Союзының үҙ ваҡытында Великобритания хөкүмәтенең мөрәжәғәтенә яуап итеп, Корея мәсьәләһен тыныс юл менән яйға һалыу тураһында тәҡдим яһауын, ләкин был тәҡдимдең кире ҡағылыуын Джессептең белмәүенә ышаныуы ҡыйын.

Джессеп шулай уҡ Кореялағы хәлде тыныс юл менән яйға һалыу тураһындағы мәсьәлә буйынса Генералиссимус И. В. Сталин менән Индияның премьер-министры Неру араһында телеграммалар менән алмашыу булыуын да белмәй ҡалмағандыр. Ләкин Кореяға ҡаршы агрессия юлына баҫыусыларҙың, күрәһең, башта баштары бик нык әйләнгәндер. Был тәҡдимдәрҙе уларҙың ишетмәүен һәм Кореялағы агрессияны тормошҡа ашырыуҙы әле булһа дауам иттереүҙәрен тик бының менән генә аңлатырға мөмкин.

— Йәнәһе совет делегацияһы килешеүгә өлгәшеүҙе блокировать итә, тигән раҫлауға килгәндә, был раҫлау көлкөлө булып тора, — тип дауам итте Громыко. — Беҙ, һуңғы сиктә, фактарҙы объектив баһаларға һәм тыңларға теләүселәргә беҙҙең кәңәшмәлә осраған, шул иҫәптән Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә айҡанлы осраған ҡыйынлыҡтарҙа үҙебеҙҙең ғәйепһеҙ булыуыбыҙҙы иҫбатланыҡ. Беҙ алдау менән шөғөлләнеүгә ҡаршы киләбеҙ. Беҙ Европала тыныслыҡты нығытыуға һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға бәйләнгән ысынлап та мөһим мәсьәләләрҙе тикшереү яғында торабыҙ. Көнбайыш державалар хөкүмәттәре быға ҡаршы киләләр, — тимәк улар килеп тыуған ҡыйынлыҡтар өсөн ғәйепләләр. Министрҙар Советын саҡырыу министрҙарҙың осрашыуы өсөн генә түгел, ә был осрашыуҙың ыңғай һөҙөмтәләр биреүе өсөн кәрәк. Тап бына шуға күрә лә беҙ Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне тикшерергә тәҡдим итәбеҙ.

— Көнбайыш державаларҙың хөкүмәттәре, — тип билдәләне СССР вәкиле, — был мәсьәләнең әһәмиәтен иҫәпкә алып, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне еңел генә хәл итә алмайҙар. Әгәр ҙә улар был пунктты көн тәртибенә индереүгә артабан да ҡаршы килһәләр, был уларҙың Европалағы киеренкелекте бөтөрөүгә һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға ҡағылған мөһим проблемаларҙы тикшерергә үҙҙәренең теләмәүҙәре тураһында ҡул ҡуйыуҙарын аңлатасаҡ. Министрҙар кәңәшмәһенә тик общественный фекерҙе, шул иҫәптән үҙ илдәрендәге общественный фекерҙе лә алдау өсөн генә барыуҙары тураһында улар ҡул ҡуясаҡтар. Әлбиттә, улар үҙҙәренең бындай ҡылыҡтарының эҙемтәләре өсөн яуаплы буласаҡтар.

Пароди тәҡдиме буйынса 30 майҙа йыйылмасҡа ҡарар ителде.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 30 май. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 30 майҙа фронттың бөтә участкаларында ла Халыҡ армияһының частәре, Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Америка-Англия интервенционистик ғәскәрҙәренең ҡаты контратакаларын кире ҡағыуҙы дауам иттерҙеләр, тип хәбәр итте.

30 майҙа Халыҡ армияһының ярҙамсы яр частәре көнсығыш яр буйында Вонсан портына үтеп инергә маташҡан дошман карабтары — «Нью-Джерси» линкорына һәм «Бринкли Бэсс» эскадра миноносецына серьёз зыян яһағанлар.

Панчен-Лама һәм уның эргәһендәге совет члендәренең белдереүе

ПЕКИН, 30 май. (ТАСС). Синьхуа агентлығы, Панчен-Лама һәм уның эргәһендәге совет члендәре Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар тураһындағы килешеүҙе яҡлап, белдереү иғлан иттеләр, тип хәбәр итә. Белдереүҙә былай тип әйтелә:

Үҙәк халыҡ хөкүмәте Тибетте тыныс азат итеү тураһында мәсьәлә буйынса Тибеттең урындағы хөкүмәте менән тәңкәтләнерлек килешеү төҙөнә. Хәҙер Тибет милләте үҙенән империализм бығауҙарын алып ташланы һәм бөйөк тыуған илебеҙҙең ҙур семьяһына ҡайтты. Ҡытайҙың төрлө милләттәре был күренеште ваҡиғаны шатланып ҡаршыланылар. Беҙ Тибет милләтенең вәкилдәре булып торабыҙ һәм шуға күрә үҙ шатлығыбыҙҙы белдереү өсөн һүҙ таба алмайбыҙ. Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең Тибеттең урындағы хөкүмәте менән килешеүе хәҙер Тибетҡа ҡаршы империалистик агрессияның еңелеүен һәм Тибет милләте менән Ҡытайҙың башҡа милләттәре араһындағы берҙәмлекте һәм Тибет милләтенең үҙенең берҙәмлеген билдәләне. Хәҙер Тибет милләте яңы тарихи эпохаға инә.

Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар тураһында Үҙәк халыҡ хөкүмәте менән Тибеттең урындағы хөкүмәтенең килешеүе Ҡытайҙың бөтә милләттәренең һәм бигерәк тә Тибет милләтенең интерестәренә тулыһынса ярашлы булып тора. Был килешеүҙе төҙөгән өсөн беҙ беренсе нәүбәттә үҙебеҙҙең бөйөк халыҡ юлбашсыбыҙ председатель Мао Цзэ-дунға, уның гуманлы етәкселегә һәм Тибет милләте тураһындағы атайҙарса хәстәрлегә өсөн, тәрән рәхмәт әйтергә тейешбеҙ. Беҙ шулай уҡ Ҡытай халыҡ азатлыҡ армияһына һәм Ҡытайҙың бөтә халыҡтарына рәхмәт әйтәбеҙ. Тап бына уларҙың эҙмә-эҙлелелеге һәм империалистарҙы һәм гоминдансы реакцион режимды уларҙың еңеүе арҡаһында Тибетте тыныс азат итеү мөмкин булды. Шул уҡ ваҡытта 14-се Далай-Лама бөтә ваҡыт үҙенә алған көндә ул Тибетте тыныс азат итеүгә Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең саҡырыуына яуап бирҙе һәм һөйләшеүҙәр алып барыу һәм килешеүгә ҡул ҡуйыу өсөн Пекинга делегаттар ебәрҙе. Был тәрән хөрмәткә лайыҡлы.

Тибет милләтен тулыһынса азат итеү һәм сәскә аттырыу хеҙмәтенә, Ҡытай халҡының еңеүен нығытыу хеҙмәтенә беҙ председатель Мао Цзэ-дун етәкселегендә Үҙәк халыҡ хөкүмәте етәкселегенең һәм Ҡытай коммунистар партияһын яҡларға ҡарар иттек. Беҙ килешеүҙе асыҡ тормошҡа ашырыуға, Тибет милләтенең Ҡытайҙың башҡа милләттәре менән берҙәмлегенә һәм Тибет халҡының үҙенең берҙәмлегенә ынтыласаҡбыҙ.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

2 һәм 3 июндә рус драма театры бинаһында Татарстандың Ғ. Тукай исемендәге филармонияһы солистәренең ҡатнашлығында Татар АССР-ының атҡаҙанған артистәре Ф. Йосопов һәм Ғ. Волиевтең концерте буласаҡ.

Башлана кис 9 сәғәттә.

Мәжбүри окладной страхование тураһында

Мәжбүри окладной страхование тураһында 1940 йылдың 4 апрелендә ССР Союзы Верховный Советы тарафынан ҡабул ителгән закон һәм СССР Финанс министерствоһының 1946 йылдың 9 сентябрендәге 614-се номерлы инструкцияһы һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының 1951 йылдың 15 февралендәге 103-сө номерлы ҡарары нигеҙендә Госстрах колхоздарҙа һәм граждандарҙың хужалыҡтарында мәжбүри окладной страховать ителәргә тейеш булған объекттарҙы (ҡоролмаларҙы, малдарҙы, ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен һәм башҡа милекте) иҫәпләүҙе үткәрә.

Иҫәпләү бөткәндән һуң һәр бер страхователгә страховой таныҡма (извещение) биреләсәк.

Страховой сумманы түләү срогы түбәндәгесә билдәләнелгән: колхоздар өсөн — түләү суммаһының 40 проценты 15 сентябргә, 30 проценты — 1 ноябргә һәм 30 проценты 1 декабргә; колхозсылар, эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм башҡа граждандар өсөн — түләү суммаһының 50 проценты 1951 йылдың 15 сентябренә һәм 50 проценты 1 ноябргә.

Колхоздар, шулай уҡ граждандар страховой түләүҙәрҙең тейешле суммаһын срогынан алда индерә алалар.

Срогында индерелмәгән страховой түләүҙәр недоимкаға әйләнәләр. Недоимкаға үткән түләү срогының һәр бер көненә түбәндәге күләмдәрҙә пеня аҫтала: колхоздарҙан — 0,05 процент, граждандарҙың хужалыҡтарынан — 0,1 процент.

Недоимкаларҙың барлыҡҡа килеүенә юл ҡуймағыҙ.

Госстрахтың Башҡорт АССР-ындағы Управлениеһы.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — «КЭТО МЕНӘН КОТЭ».

Рус драма театрында — «ҺОТОРОНҒАН АҠСАЛАР».

«Октябрҙә»—«БУЙҺОНМАҒАН ҠАЛА».

«Салауатта» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘАРЫ».

«Уралда» — «БУЙҺОНМАҒАН ҠАЛА».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «МӘСКӘҮҘӘН АЛЫҪТА».

«Иҙелдә» — «КУБАНЬ КАЗАКТАРЫ».

Өфө ҡалаһы малярияға ҡаршы станцияһының белдереүе

1951 йылдың 5 июненән алып 12 июненә тиклем республиканың малярияға ҡаршы станцияһы малярия серәкәйҙәренең ҡарышлауыҡтарын бөтөрөү маҡсатында һыу ятҡылыҡтарына самолеттан ағыу һибәсәк, тип белдерә. Ағыулау эштәре тиодифениламин һәм Париж йәшеле ҡулланыу юлы менән Өфөнән Черниковск ҡалаһына тиклем 5 километрлыҡ зонала һәм халыҡ йәшәгән пункттар: Октябрьская революция исемендәге затон, Михайловка, Суровка, Черниковск химия заводының ҡала яны хужалығы, Алексеевка, Сосновка, Тарбеевка, Лавочное, ст. Александровка, Максимовка, Шакша, Базиловка, Йылҡыбай, Дудкин переправаһы, Өфө яҙ йорто, Карповка, Чесноковка, биофабриканың ярҙамсы хужалығы, Өфө ҡалаһының Дим районы Кустарево, Романовка, Миловканан алыҫ түгел урындарҙа үткәреләсәк.

Умарта аҫраған бөтә кешеләр умарталарын ағыуланасаҡ торған һыу ятҡылыҡтарынан 7-10 километрға ситкә сығарырға тейештәр.

Мал аҫраусылар ағыулау үткәргәндән һуң 3 тәүлек буйына малдарын ағыуланған һыу ятҡылыҡтарына ебәрмәҫкә тейештәр.

Белешмәләр алыу өсөн түбәндәге адресҡа мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 74-се номерлы йорт. Телефон номеры — 2-92-91.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

КЫҘЫЛ БАШКОРТОСТАН

№ 107(8824) 1951 йыл 2 июнь шәмбе

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттары, Башкорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө Кала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА. А. Туголуков. — Техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн көрәштә (1-се бит).
А. Бакиров.—Яңы уҡыу йылына яҡшы әҙерлек менән киләбеҙ (1-се бит).
И. В. Сталин Әҫәрҙәренең ун өсөнсө томы (2 һәм 3-сө биттәр).
М. Мостафин. — Черниковск ҡалаһының партия активы йыйылышы (3-сө бит).
РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР (3-сө бит).
АЛДЫНҒЫ ТӘЖРИБӘЛӘР ТРИБУНАҺЫ.
А. Котельников. — Люцерна үҫтереүҙә беҙҙең тәжрибә (3-сө бит).
Х. Сафин. — Үлэй МТС-ында хеҙмәт етештереүсәнлеге лә, сифат та түбән (4-се бит).
Башкорт Академия театры гастролдәре уңышлы дауам итә (4-се бит).
Тынысылыҡ пакты өсөн (4-се бит).
Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).
Студенттарҙың халыҡ-ара союзының белдереүе (4-се бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Йәйге осорҙа спорттың яңы уңыштарына

Партия һәм хөкүмәт хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнаған физик культураға һәм спортҡа ғәйәт ҙур әһәмиәт бирәләр. Совет кешеһе физик яҡтан таҙа, ҡыйыу характерле, хеҙмәттә батырлыҡ күрһәтеүгә һәләтле булырға тейеш. Коммунистик общество төҙөү буйынса бөйөк эш быны шундай талапты ҡуя.

Партияның һәм иптәш Сталиндең физик культураны һәм спортты йәйелдереү, уны алға ебәреү тураһында даими, атайҙарса хәстәрлеге үҙенең бай емештәрен бирә: беҙҙең илебеҙҙә спорт массовый төҫ алды, спорттың бөтә төрҙәре буйынса донъяны таңға ҡалдырған рекордсмендәр — спорт мастерҙарының илендәһы барлыҡҡа килде. Бындай ғүзәл өлгәшеүҙәрҙең беҙҙең илдә, спорт миллиондарҙың яратҡан эше булып әүерелгән һәм уларға үҙҙәренең һәләтлектәрен күрһәтеү өсөн ысынлап та талап ителгән бөтә шарттарҙың тыуҙырылыуы һөҙөмтәһендә генә булыуы мөмкин.

Физик культура һәм спорттың үҫешен беҙҙең республика миҫалында ғына ла асыҡ күрергә була. Һуңғы йылдарҙа физик культура менән шөғөлләнеүселәр һаны тайпылышһыҙ үҫә. Был үҫеш үҙған йылда ғына ла 20 мең кеше самаһы тәшкил итте һәм спортҡа һаман яңы кестәр килә.

Үҙған йылдың декабрь айында Россия Федерацияһы Министрҙәр Советы ҡарары нигеҙендә ойошторолған «Колхозник» ирекле спорт обществоһы ауыл ерҙәрендә, колхозсы крәҫтиәндәр араһында спорттың массовый төҫ алыуында өлгәшеүҙә сетсә аҙым булып тора. Колхозсылар РСФСР хөкүмәтенең был ҡарарын ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланылар һәм хәҙер обществоның күп кенә төүге коллективтәре үҙҙәренең эштәрен уңышлы ғына ойоштороп ебәрҙеләр. Колхоз ауылдарында ирекле спорт обществоһы байрағы аҫтына меңдәрсә йәш колхозсылар баҫтылар. Ләкин эш быйың менән генә бөтмәй, былар төүге этапта башҡарылған эштәр генә әле. Бурыс — массовый төҫ алған коллективтәрҙең эшен бөтә урында ла планлы ойоштороуҙан, значоктар өсөн нормалар тапшырыусыларҙы әҙерләү һәм был өлкәлә билдәләнгән пландың үтәлеүен тәьмин итеүҙән тора. «Колхозник» спорт обществоһының урындағы коллективтәрендә был уңай менән башҡарылып килгән эштәрҙе ҡәнәғәтләнерлек тип иҫәпләп булмай әле. Айырым урындарҙа обществоның төүге коллективтәре бары тик ҡағыҙҙа ғына йәшәй, улар менән даими, тейешенсә эш алып барылмай. Миҫалан, Покровка районында эш шулай булды: күпселек колхоздарҙа «Колхозник» обществоһының төүге коллективтәре төҙәлде, төүге ойоштороу саралары үткәрелгәндә коллективтәргә ҡарата бер ни тиклем иғтибар ҙа бар ине. Ләкин бында колхоз ауылы эшсәндәре өсөн был яңы, шул уҡ ваҡытта файҙалы сараны бик тиҙ онотторлар, райондың партия, совет һәм комсомол ойошмалары уларҙың эштәренә артабан тейешле иғтибар бирмәнеләр.

Шундай уҡ хәлдәрҙе Зианчура, Миәкә һәм башҡа райондарҙа ла күрергә мөмкин.

Ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа яңы спорт майҙандары төҙөүгә, булғандарын үҙ ваҡытында яҡшы итеп ремонтлауға ныҡлы әһәмиәт бирелергә, был эштәрҙе башҡарыу өсөн ебәрелгән средстволар тулыһынса һәм үҙ урындарында файҙаланылырға тейештәр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был законлы һәм урынлы талап һәр ҡасан да еренә еткерелеп үтәлмәй әле. Өфө ҡалаһында «Искра» обществоһының стадионын төҙөп бөтөрөүҙе тиҙләтеү тураһында ҡасанға тиклем һүҙ алып барырға мөмкин ине! Стадионды төҙөп бөтөрөү тураһында бик күп кәңәшмәләрҙә һөйләнде. Был турала бик күп кенә ҡарарҙарға айырым пункттар ҙа яҙылып үтелгән. Шулай ҙа уны төҙөүсе «Башстрой» тресы (директоры иптәш Конкин) үҙенә тапшырылған был мөһим бурысты һаман наҫар үтәй.

Өфө тимер юл профсоюзы комитете спорт ҡоролмалары өсөн бүленгән махсус средство була тороп, уны үҙ ваҡытында урынлы итеп файҙаланыу сараһын күрмәне. Миҫалан, комитет Өфө тимер юлы эшселәре йәшәй торған ике райондың берәһендә — Дим йәки Молотов районында стадион төҙөргә тейеш. Ләкин шул мәсьәләне — ҡайһы районда стадион төҙөүҙе комитетта һуңғы ваҡытҡа тиклем хәл итә алмай килделәр, шуның менән әһәмиәтле сара үҙ ваҡытында тормошҡа ашырылмай.

Профсоюз һәм комсомол ойошмалары физкультура һәм спорт эше менән айырыуса ныҡ шөғөлләнергә, спорт обществоларын даими хәстәрлек менән солғап алырға тейештәр. Һәм шул айҡанлы әйтеп үтергә кәрәк, республикабыҙҙа уңышлы ғына башланғыс та булды, ВЛКСМ-дың Өфө ҡала комитеты ҡаланың спорт майҙандарын һәм ҡоролмаларын йәйге сезонға әҙерләү буйынса айлыҡ үткәрҙе. Айлыҡта ҡала йәштәре ҙур активлек менән ҡатнаштылар һәм был осорҙа бик күп кенә эштәр башҡарылды. Өфө йәштәренең инициативаһы хупланыуға һәм бөтә республика ҡалаларында, шулай уҡ райондарында дауам иттерелергә хаҡлы булып тора.

Йәштәр араһында, бигерәк тә уҡыусы йәштәр араһында йәйге осорҙа, каникул башланыу менән спорттың туҡталып ҡалыуына юл ҡуйырға ярамай. Пионер лагерҙарында, ял йорттарында, спорт майҙандарында уны тағы ла ойошҡанлыраҡ рәүештә дауам иттерергә кәрәк.

Район физкультура һәм спорт комитеттарына етәкселек, уларҙың эшмәкәрлегенә партия, совет ойошмалары, республика Министрҙәр Советы эргәһендәге физкультура һәм спорт эштәре комитеты тарафынан үҙ ваҡытында ярҙам итеү һәм юнәлеш биреү тәртипкә һалынырға тейеш. Юҡ ниә әле айырым райондарҙың физкультура һәм спорт комитеттары ҡасандыр нормаларын тапшырған значкистарҙың һанын иҫәпләүҙән, спорт коллективтәренең исемлеген күсереп яҙыуҙан, мәғлүмәттәр йыйнауҙан уҙа алмайҙар. Практик эш кабинетта түгел, уның урыны — предприятиеларҙағы, колхоздарҙағы коллективтәрҙең члендәре араһында, спорт майҙандарында. Комитеттарҙың эшен бына шунда күсереү өсөн асыҡ эш планы булырға, унда билдәләнгән сараларҙы үтәү өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырылырға тейеш. Шунда әйтеп үтергә кәрәк, ҡайһы бер коллективтарҙа билдәләнгән яҡшы ғына саралар ҙа уны үткәреүгә етәкселек итеүсенең, атап әйткәндә, йыш ҡына хәлдәрҙә тренерҙәрҙең булмауы һөҙөмтәһендә өҙөләләр. Спорт коллективтәре өсөн тренерҙәр әҙерләүҙе юлға һалыу менән бергә, уларға спорт мастерҙарының шефлыҡ итеүен булдырыу, спорт йәштәре менән мастерҙар араһында бәйләнеште ныҡытыу, һис шикһеҙ, ыңғай һөҙөмтә бирәсәк.

Йәй — физкультура һәм спортты йәйелдереү, массовый саралар үткәреү өсөн иң уңайлы ваҡыт. Уны мөмкин тиклем уңышлыраҡ файҙаланырға, республиканың бөтә урындарында спорт сараларына киң юл асылырға тейеш. Үткәрелә торған һәр төрлө ярыштарҙың һәм спартакиадаларҙың һөҙөмтәле булыуҙарына, унда күп кешенең ҡатнашыуына өлгәшергә кәрәк.

Колхоз ауылында «Колхозник» обществоһының эшенә даими етәкселек итеү, уның урындағы коллективтәрен нығытыу һәм планлы эшләүҙәрен тәьмин итеү — ауыл партия, совет һәм комсомол ойошмаларының мөһим бурысы.

Ҡалаларҙа, промышленность үҙәктәрендә, быға тиклем йәшәп килгән спорт обществоларының эшен йәнләндерергә, улар башҡара торған эштәр менән даими ҡыҙыҡһынырға кәрәк.

Республикала йәйге осорҙа спорттың яңы уңыштарына өлгәшеү, спорт мастерҙарының яңы отрядын тәрбиәләү — партия ҡуйған бурысты үтәү буйынса ҙур аҙым, партия һәм хөкүмәт күрһәткән хәстәрлеккә һәм ярҙамға лайыҡлы яуап булыр.

Башкорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында

Ошо көндәрҙә Башкорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы ултырышында Оло Теләк районында күп балалы әсәләрҙе наградлауға тәҡдим итеү, наградланғандарға ордендәр һәм медалдәр тапшырыу эшенең торошо тикшерелде һәм ул ҡәнәғәтләнмәҫлек тип табылды.

Район Советы исполкомы тарафынан был эшкә тейешле иғтибар бирелмәү арҡаһында байтаҡ ҡына күп балалы әсәләр учетҡа алынмаған һәм улар ордендәр, медалдәр менән наградлауға тәҡдим ителмәгәндәр. Район һәм ҡайһы бер ауыл Советтары исполкомдарында наградалар тапшырылырға тейешле булған әсәләргә ордендәр һәм медалдәр ваҡытында бирелмәгән.

Башкорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Оло Теләк район Советы исполкомына был етешһеҙлектәрҙе тиҙ көндәрҙә бөтөрөргә тәҡдим итте.

Ултырышта шулай уҡ хеҙмәтсәндәрҙең ғаризаларын, жалобаларын учетҡа алыу һәм уларҙы тикшереү эшенең торошо тураһында Министрҙәр Советы эргәһендәге кинофикация управлениеһы начальнигы иптәш Ғафаровтың докламы тыңланды.

БАШКОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫ ДЕПУТАТТАРЫ ИҒТИБАРЫНА

Башкорт АССР-ы өсөнсө саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы 5 июнда көндөҙгө 12 сәғәттә асыласаҡ.

Башкорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһына килгән депутаттарын регистрациялау һәм справкалар биреү көн һайын Башкорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында иргәнге 10 сәғәттән төнгө 12 сәғәткә тиклем үткәрелә. Адрес: Пушкин урамы, 106, 2-се ҡат, 65-се бүлмә, телефон 2—68—82.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн көрәштә

Ленин — Сталин партияһы беҙҙең илебеҙҙе техник прогресс юлы менән алып бара. Промышленность производствоһының күтәрелеше предприятиеларҙы яңы техника менән байыҡтырыу, алдынғы технологияны индереү, производство культураһын күтәреү нигеҙендә бара. Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы промышленность предприятиеларының яңы техника менән байыҡтырылыуы — бының асыҡ миҫалы. Беҙҙең ҡаланың завод-фабрикалары, төҙөлөш ойошмалары беренсе класлы техника менән тәьмин ителгәндәр. Предприятиеларҙа хәҙер металл ҡырҡыусы уникаль станоктар, күтәргес һәм транспорт механизмдары, автоматтар һәм ярым автоматтар эшләйҙәр.

Беҙҙең төҙөлөш тресттары бик күп яңы машиналар — скреперҙар, бульдозерҙар, экскаваторҙар, төрлө вертикаль һәм горизонталь транспортерҙар алдылар. Улар эшселәрҙең хеҙмәтен байтаҡ еңеләйтәләр. Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте халыҡ хужалығын техник реконструкциялау процесында техниканы тулы файҙалана алырлыҡ кадрҙар әҙерләп үҫтерҙе.

Яңы техниканы яҡшы файҙаланған «Красный пролетарий» заводы коллективы һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың бөтә йылдарында ла производство программаһын уңышлы үтәне. Унда продукция етештереү 1950 йылда, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 288 процентҡа артыҡ тәшкил итте.

Яңы техниканы һәм алдынғы технологияны производствоға индереү хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙе, продукцияның үҙенә төшәү хаҡын кәметеүҙе һәм башҡа техник экономик күрһәткестәрҙе яҡшыртыуҙы тәьмин итте.

Заводта хеҙмәтте ойоштороу эшендә лә күп кенә яңы методтар индерелде. Миҫалан, сменаларҙы эш барышында тапшырыу, оборудованиеларҙың ремонт-ара срогын оҙайтыу буйынса иптәш Кафаров методын индереү, планлы иҫкәртеү ремонты үткәреп станок һәм оборудованиеларҙың эшен яҡшыртыу кеүек башҡа саралар үткәрелде.

Ремонт-механика цехындағы бөтә оборудованиеларҙы эшселәр социалистик һаҡлыҡҡа алдылар. Был эш башҡа цехтарҙа ла яҡшы ойошторолған. Күп кенә бригадалар һәм цехтар инженер Ковалев методы менән эшләйҙәр. Электросварщик иптәш Ибраһимов элек бер детальде 15 сменә буйына эшкәртһә, Ковалев методын индергәндән һуң, ул детальде 5 сменала эшкәртә башланы. Алдынғы стахановсы эш алымдарын индереү арҡаһында тимерлек цехы тотош стахановсы цех булды.

Завод коллективы рационализация һәм уйлап табыу эштәренә лә ҙур иғтибар итә. Былтыр 44 рационализаторлыҡ тәҡдим производствоға индерелеп, уларҙан 96 мең һум экономия алынды. Хәҙер заводта бөтә эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәр ҙә социалистик ярышты киң йәйелдергәндәр. Стахановсылар һәм ударниктар һаны унда арҡандан-арта бара. 9 бригадаға «Отлично сифат бригадаһы» исеме бирелде.

Предприятиеларҙа техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу нигеҙендә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, производство планын срогынан алда үтәү мөһим шарт. Һәр бер предприятие тик график буйынса, ритмлы эшләргә, айҙан-айға планды уңышлы үтәргә һәм арттырып үтәргә тейеш. Бының өсөн ҡаланың предприятиеларында бөтә мөмкинлектәр бар.

А. Туголуков,
ВКП(б)-ның Стәрлетамаҡ ҡала комитеты секретары.

Башкорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының указы менән драматург һәм композитор Х. К. Ибраһимовҡа Башкорт АССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле исеме бирелде.

Һүрәттә: Башкорт АССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле иптәш Х. К. Ибраһимов.

Медицинала электр

Бөрө ҡалаһындағы клиниканың электр нурҙары менән дауалау бүлексәһе бар. Унда ауырыуҙар өсөн 24 койка, 2 врач-невропатолог һәм уңға яҡын башҡа медик-персонал бар. Бүлексәлә үҙған йыл 238 ауырыу дауаланды. Уларҙың 56-һы больницанан сығыу менән үк эшләй башланы.

Дауалау кабинеттары бик күп төрлө приборҙар менән йыһазландырылғандар. Диатермия, кварц, солюкс, камерный ванна, световой бука, гальванизация һәм башҡа шундай приборҙар ярҙамында нерва, паралич, ревматизм, йөрәк, мускул ауырыуҙары, рахит, туберкулез, ашҡаҙан һәм эсәк ауырыуҙарынан дауаланалар.

Ауырыуҙарҙы электр нурҙары менән һауыҡтырыу тураһында бер генә факт килтереү ҙә етә. Үҙған йылдың декабрь айҙарында беҙгә Камышинканан 1943 йылдан бирле хроник һәйәк ревматизме менән ауырыусы Мостаев Әсәтте килтерҙеләр. Таҙалығы бик насар ине. Ике аяғы ла берегеп ҡатҡайны. Больницаға һалып, 4 ай электр нурҙары менән дауалағас та, ул ҡултыҡ таяғы менән йөрөй башланы. Хәҙер уның таҙалығы көндән-көн яҡшыра бара.

Совет медицинаһы беҙҙең илебеҙҙә кешеләрҙең һаулығын һаҡлауға айырыуса ҙур иғтибар бирә. Медицинала хәҙер электр нурҙары дауалау средствоһы итеп киң файҙаланыла.

А. Тимофеев,
Бөрө ҡалаһы клиникаһындағы электр менән дауалау бүлексәһе мөдире.

Сәсеүлектәрҙе хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр

Маҡар районы колхоздарында сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу эштәре киң йәйелдерелде.

«Ҡыҙыл таң», «Сулпан», «III интернационал», һәм Карл Маркс исемендәге колхоздарҙа был эш айырыуса ойошҡанлыҡ менән бара.

Карл Маркс исемендәге колхозда 351 гектар майҙанда ужым культуралары, 250 гектар майҙанда бойҙай, һоло һәм кенәбағыш культуралары ҡый үләндәренән таҙартылды.

Утау эштәре баҫыусылыҡ бригадалары араһында йәйелдерелгән социалистик ярыш нигеҙендә бара. Ярышта иптәш Мостәҡимов етәкселек иткән бригада алда бара. Был бригаданың члендәренән З. Хисмәтуллина, М. Рәхмәтуллина иптәштәр көндәлек эш нормаларын байтаҡ арттырып үтәп, башҡаларға өлгө күрһәтәләр.

«Яңы тормош», «Шишмә» колхоздарында ла утау эштәре яҡшы бара.

З. Низамов.

Яңы уҡыу йылына яҡшы әҙерлек менән киләбеҙ

Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәренең яңы уҡыу йылын өлгәлә әҙерлек менән ҡаршыларға саҡырып яҙған мөрәжәғәте Күгәрсен районы общественноҫе араһында киң отклик тапты. Был мөрәжәғәтте өйрәнеп, мәктәп коллективтәре, колхозсылар үҙҙәренең йыйылыштарында яңы уҡыу йылына әҙерлек буйынса практик йөкләмәләр алдылар һәм конкрет саралар билдәләнеләр.

Мраҡ ете йыллыҡ мәктәбе коллективы дүртөйлөләрҙең саҡырыуын ҡайнар хуплап, яңы уҡыу йылына әҙерлектә күп кенә практик эштәр башҡарҙы. Ҡыш сезонына етерлек күләмдә әҙерләнгән 400 кубометр утын ташып ҡуйылды. Мәктәп бинаһына ремонт үткәреү өсөн төҙөлөш материалдары әҙерләнде. Общественность ярҙамында уҡыу йәшендәге балаларҙы иҫәпкә алыу тамамланды.

Күгәрсен ауылында стандарт урта мәктәп бинаһы төҙөү эштәре башланды. Буласаҡ мәктәп усадьбаһына 400 метр бураһа, нигеҙ һалыу өсөн етерлек таш һәм башҡа төҙөлөш материалдары ташылды. Усадьба ҡойма менән уратып алынды.

Райондың бөтә мәктәптәрендә лә тип әйтерлек яғыулыҡ әҙерләү эштәре башланды. Талап ителгән утындың 40 проценты әҙерләнде лә инде. 2 мең кубометрҙан артыҡ утын мәктәптәр эргәһенә ташып ҡуйылды.

Бик күп мәктәптәрҙә мәктәп алды участкалары булдырыу сараһы күрелә. Миҫалан, Сәнтҡол ете йыллыҡ мәктәбе уҡыусылары 400 төп емеш-еләк үҫентеһе һәм 100 төптән артыҡ декоратив ағастар ултырттылар.

Яңы уҡыу йылын өлгәлә әҙерлек менән ҡаршылау өсөн беҙҙең районда мәктәптәрҙе уҡытыусылар коллективтәре менән комплектовать итеү, улар өсөн көн-күреш шарттарын артабан яҡшыртыу буйынса күп кенә эш алып барыла. Быйыл уҡытыусылар коллективы юғары һәм урта белемле 32 кеше менән тулыландырыласаҡ. Улар өсөн Сәнтҡол, Юлдыбай һәм башҡа ауылдарҙа — бөтәһе 5 урында торлаҡ йорттары һалына.

Райондың мәктәптәрендә быйыл 7000-гә яҡын бала уҡыясаҡ.

А. Бакиров,
Күгәрсен районы мәғариф бүлеге инспекторы.

Өфө ҡала Советының IV сессияһы

31 майҙа Өфө ҡала Советының IV сессияһы булып үтте. Ҡала Советы исполкомы председателенең урынбаҫары депутат Л. И. Земцов «Ҡаланың урындағы һәм кооператив промышленноҫе эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» доклад менән сығыш яһаны. Шулай уҡ сессия ошо мәсьәлә буйынса даими промышленность комиссияһы председателенең урынбаҫары депутат Мирконың ҡушымта докладын тыңланы.

— Үткән — 1950 йыл, — тине иптәш Земцов, — социалистик хужалыҡ һәм культура төҙөлөштәренең бөтә участкаларында ла тарихи яңы еңеүҙәр йылы булды.

Беҙҙең илебеҙҙә, — ти докладсы һүҙен дауам иттереп, — киң ҡулланыу тауарҙарын һәм аҙыҡ-түлек продукттары етештереү кварталдан-кварталға, айҙан-айға арта бара. Был өлкәлә Өфө ҡалаһының урындағы һәм кооператив промышленноҫе лә ҙур ғына уңыштарға өлгәште. 1950 йылдың һәм быйылғы йылдың 4 айлыҡ производство пландары тотош ҡала буйынса алғанда байтаҡ арттырылып үтәлде.

Ләкин алдынғы предприятиелар менән бер рәттән, производство планын йылдан-йылға үтәмәй килеүсе предприятиелар ҙа юҡ түгел. Миҫалға урындағы промышленностың Пимошив фабрикаһын (директоры иптәш Яфаева) алырға мөмкин. Бында хеҙмәтте ойоштороуға ныҡлы иғтибар ителмәй. Эшселәрҙе бер цехтан икенсе цехҡа тейешһеҙгә күсереү йыш ҡына була. Стахановсыларҙың эш тәжрибәһе популярлаштырылмай. Кадрҙарҙың квалификацияһын күтәреү эше ҡәнәғәтләнерлек ойошторолмаған. Һөҙөмтәлә фабрика 1950 йылда планды үтәмәне. 222 мең һум зыян күрҙе. Һуңғы ваҡыттарҙа бында эш аҙыраҡ яҡшырҙы тип әйтергә була. Шулай ҙа ул тулы ҡеүәтендә эшләй алмай әле.

Уван һүҙ докладсы Пищепромсоюздың (председателе иптәш Сәғиғәрәев), «Пищевик» артеленең (председателе иптәш Коберман) һәм байтаҡ ҡына башҡа артелдәрҙең ҡәнәғәтләнерлек эшләмәүҙәрен, киң ҡулланыу тауарҙарының тейешле ассортиментын етештермәүҙәрен тәнҡитләне. Миҫалан, урындағы промышленность предприятиелары изделиеларҙа билдәләнгән ассортименттар буйынса етештермәйҙәр. Карауат, балсыҡтан эшләнгән һауыт-һабалар, балалар уйынсыҡтары, мебель кеүек халыҡ өсөн иң кәрәкле булған тауарҙарҙы етештереү пландары 30—86 процентҡа ғына үтәлде.

Хеҙмәтсәндәрҙең культура-тормош шарттары үҫкән һайын уларҙың талаптары ла арта бара. Беҙҙең урындағы промышленность предприятиелары быны аңламайҙар. Түбән сифатлы продукция эшләп сығаралар. 18 партсъезд исемендәге артелдең заказчиктәрҙең тауарҙарын боҙып биреүе тураһында бик күп жалоба килә. Ә артель председателе иптәш Иванова эштең сифатын яҡшыртыу сараһын күрмәй. Һаман да артта ҡалған — иҫке эш методын дауам иттерә.

Иптәш Земцов етешһеҙлектәргә конкрет анализ яһап, урындағы һәм кооператив промышленноҫе предприятиеларының эштәрен киләсәктә яҡшыртыу сараларына туҡталды.

Доклад буйынса фекер алышыуҙа 10 кеше ҡатнашты.

— Ҡаланың урындағы промышленность предприятиелары, — тине иптәш Щипанов (ҡала сауҙаһы бүлеге мөдире). —Сауҙа ойошмалары менән төҙөшкән договорҙарын һәм үҙ-ара килешеү буйынса алған йөкләмәләрен үтәмәйҙәр. Урындағы промышленность килешеү йөкләмәһе буйынса 24 төрлө киң ҡулланыу тауарҙары етештерергә тейеш ине, ул бөгөнгә көнгә ни бары биш төрлө генә тауар бирә. Шулай уҡ промкооперациялар ҙа 40 төрлө тауарҙың 19 төрөн генә етештерәләр.

Ҡайһы бер тауарҙарҙың сифаты түбән булғанлыҡтан, магазиндарҙа үтмәйенсә хәрәкәтһеҙ капитал булып яталар. Тик «Металлист» артеле тарафынан етештерелгән сифатһыҙ ҡыҫҡыстар арҡаһында ғына 90 мең һум капитал хәрәкәтһеҙ ята. Билдәле, бындай хәл тауар әйләнешө планын үтәүгә ҙур зыян килтерә. Ә предприятие етәкселәре уны аңларға теләмәйҙәр.

— Промкооперациялар, — тине депутат Соболев (ҡала торлаҡ управлениеһының начальнигы), — төҙөлөш материалдарын етештереүҙе икенсе пландағы мәсьәлә итеп ҡарайҙар. Хәҙер торлаҡ фондтарына ремонт үткәреү эшенең иң ҡыҙыу ваҡыты. Ләкин өй түбәһен ябыу өсөн табаҡлы тимер, толь, ҡаҙаҡ һәм башҡа төҙөлөш, ремонт материалдары магазиндарҙа етерлек түгел. Урындағы промышленность төҙөлөш һәм ремонт конторалары быйыл арты миллион самаһы кирбес биреп еткермәне.

Иптәш Соболев был өлкәлә урындағы промышленность министры иптәш Сливневтың үҙ ҡарамағындағы предприятиеларға талапсан булмауын, ҡайһы бер предприятиеларҙың насар эшләүе менән килешеп ҡарауын тәнҡитләне.

Дим район Советы исполкомы председателе депутат Ваньшев райондың промкомбинатына урындағы промышленность министерствоһының ярҙамы етерлек булмауын әйтеп үтте.

Сессияла ВКП(б) ҡала комитеты секретары иптәш Бабуркин сығыш яһаны. Ул урындағы һәм кооператив промышленность предприятиеларының алдында торған бурыстарҙы үтәү юлдарын күрһәтте.

Сессия тикшерелгән мәсьәлә буйынса конкрет ҡарар ҡабул итте.

И. В. СТАЛИН ӘҪӘРҘӘРЕНЕҢ УН ӨСӨНСӨ ТОМЫ

[illegible]

...кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтары бөтөрөлөп етмәгәндәр, был ҡамау СССР экономикаһында һәм уның кешеләренең аңында капитализм ҡалдыҡтарын терелтергә һәм яҡларға тырыша һәм уға ҡаршы большевиктар партияһы порохты ҡоро тоторға тейеш.

Кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтары, тип күрһәтте иптәш Сталин XVII съездағы докладында, милли мәсьәлә өлкәһендә йәшәүсән булалар, сөнки уларҙың милли костюмға яҡшы итеп маскаланырға мөмкинлеге бар. Иптәш Сталин великодержавный шовинизмға һәм урындағы милләтселеккә ҡаршы көрәшеүгә саҡырҙы. «Милләтселеккә тайпылыу, — тине ул, — эшселәр синыфының интернационалистик политикаһын буржуазияның милләтселек политикаһына яраҡлаштырыу ул. Милләтселеккә тайпылыу — «үҙ», «милли» буржуазияның тарафынан совет ҡоролошон емерергә һәм капитализмде аяҡҡа баҫтырырға булған маташыуҙарҙы сағылдыра. Күреүебеҙсә, һәр ике тайпылыштың да сығанағы уртаҡ. Был — ленинсе интернационализмдан ситкә китеү» (361-се бит). Социализмдең бөтә фронт буйынса киңәйтелгән һөжүме шарттарында И. В. Сталин тарафынан ВКП(б)-ның XVII съезында күтәрелгән бурыстар: партияның теоретик кимәлен тейешле юғарылыҡҡа күтәреү; партияның бөтә быуындарында идеология эшен көсәйтеү; ленинизмде арымай-талмай пропагандалау; партия ойошмаларын һәм уларҙы солған алған партиябыҙ активте ленинсе интернационализм рухында тәрбиәләү; марксизм-ленинизмдан ситкә тайпылыуҙарҙы һылап ҡалдырмау, ә ҡыйыу тәнҡитләү; ленинизмға дошман ағымдарҙың идеологияһын һәм идеология ҡалдыҡтарын систематик рәүештә фаш итә барыу бурыстары идея-политик эш өлкәһендә партияның иғтибар үҙәгенә ҡуйылды.

Беҙҙең партиябыҙ, был сталинсе программа күрһәтмәләрен тормошҡа үткәрә барып, ғәйәт ҙур идея-политик эште йәйелдерҙе, кадрҙарын теоретик кимәлен юғары күтәрҙе. троцкисе, зиновьевсе, бухаринсе һәм башҡа хыянатсыларҙы, шпиондарҙы һәм үтерeүселәрҙе аҙағына тиклем тар-мар итте. Партиябыҙ великодержавный шовинистарҙы һәм урындағы милләтселәрҙе ҡыйратты һәм СССР халыҡтарының ҡаҡшамаҫ дуҫлығын тағы ла күберәк нығытыуға өлгәште.

ВКП(б)-ның XVII съезында һөйләгән докладында һәм ун өсөнсө томға урынлаштырылған башҡа күп кенә сығыштарында партия тураһында марксистик-ленинсе учениене үҫтереп, иптәш Сталин партияның ойоштороу етәкселегенең ғәйәт ҙур әһәмиәтен күрһәтте, большевизмдең ойоштороу фәнен яңы баҫҡысҡа күтәрҙе.

«Еңеү бер ваҡытта ла үҙенән-үҙе килмәй, — тине иптәш Сталин, — уны ғәҙәттә тартып килтерәләр. Партияның генеральный линияһы өсөн булған яҡшы резолюциялар һәм декларациялар — былар тик эштең башы ғына, сөнки улар тик еңергә теләүҙе генә аңлаталар, ә еңеүҙең үҙен түгел. Дөрөҫ линия бирелгәндән һуң, мәсьәләне дөрөҫ хәл итеү күрһәтелгәндән һуң, эштең уңышы ойоштороу эшенә, партия линияһын тормошҡа ашырыу өсөн көрәште ойоштороуға, кешеләрҙе дөрөҫ һайлап алыуға, етәксе органдар ҡарарҙарының үтәлешен тикшереүгә бәйләнгән» (365-се бит).

Иптәш Сталин XVII съезда партияның бай ойоштороу эше тәжрибәһен дөйөмләштерҙе. Ул партияның, үҙенең бөтә көстәрен, совет халҡының бөтә көстәрен беҙҙең илебеҙҙә социализм төҙөүгә йүнәлтә барып, иисеб итеп ҡыйынлыҡтарҙы еңеүҙә ойоштороуып, эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең миллионлаған массаларын был көрәшкә ылыҡтырыуын күрһәтте.

Ойоштороу эшенең кимәлен күтәреү, социализм төҙөлөшөнөң бөтә эше өсөн тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙең әһәмиәте ҙур булды.

Иптәш Сталин партия эшендәге етешһеҙлектәрҙе ҡырҡа тәнҡитләне. Ул бюрократтарҙы һәм канцеляристарҙы, маһайған вельможаларҙы һәм төҙәтелмәҫлек лығырҙыҡтарҙы фаш итте. Иптәш Сталин төҙәтелмәҫлек, яраҡһыҙ работниктарҙы эш урындарынан алыу һәм уларҙың урындарына тапшырылған эшкә конкрет етәкселекте тәьмин итеүгә һәләтле булған кешеләрҙе үрләтеү һәм партия-совет дисциплинаһын нығытыу бурысын ҡуйҙы.

Бөтә ойоштороу эшендә үтәлеште тикшереүҙе ойоштороу эше хәл иткес әһәмиәткә эйә булып тора. «Үтәлеште тикшереүҙең яҡшы ҡуйылыуы, — ти иптәш Сталин, — аппарат эшенең хәлен теләһә ҡайһы ваҡытта яҡшыртыуға, бюрократтарҙың һәм канцеляристарҙың йөҙҙәрен асып һалыуға ярҙам итеүсе прожектор ул» (372—373-сө биттәр).

Иптәш Сталин XVII съезда ойоштороу эше өлкәһендә тарихи бурыстарҙы: беҙҙең ойоштороу эшебеҙҙе алда ла партияның политик линияһы талаптарына яраҡлы итеү; ойоштороу етәкселеген политик етәкселек кимәленә тиклем күтәреү; ойоштороу етәкселегенең партияның политик лозунгыларын һәм ҡарарҙарын тормошҡа үткәреүҙе тулыһынса тәьмин итерлек булыуына өлгәшеү бурысын ҡуйҙы.

Иптәш Сталиндең күрһәтмәләрен ғәмәлгә ашыра барып, партия үҙенең ойоштороу етәкселеген системалы яҡшырта, коммунистик төҙөлөштөң яңы бурыстары айҡанлы партия эшенең форма һәм методтарын камиллаштыра бара.

Ойоштороу эшенең әһәмиәте тураһында сталинсе күрһәтмәләрҙең хәҙер ҙә, партия ойошмалары алдына партия-ойоштороу һәм партия-политик эш мәсьәләләренә иғтибарҙы йүнәлтеү, партия-политик һәм хужалыҡ эшмәкәрлеген дөрөҫ ярраштырыу, партия етәкселегенең стилен һәм методтарын камиллаштырыу бурыстары ҡуйылған ваҡытта, ғәйәт ҙур әһәмиәттәре бар.

Партияны уның эшмәкәрлегенең бөтә өлкәләре буйынса ла конкрет программа менән ҡоралландырып, иптәш Сталин XVII съездағы докладында коммунизм төҙөүҙең тарихи бурыстарын хәл итеү өсөн партия һәм халыҡты даими мобилизацион әҙерлек хәлендә тотоу кәрәклеген бик асыҡ әйтеп үтте. Иптәш Сталин былай тип әйтә: «...Партияны тынысландырырға түгел, — ә ундағы уяулыҡты үҫтерергә, уны йоҡлатырға түгел, — ә ҡоралландыра барырға, демобилизовать итергә түгел, — ә уны мобилизовать ителгән хәлдә тоторға кәрәк...» (376-сы бит).

Беҙҙең партиябыҙ үҙенең бөтә эшмәкәрлегендә бөйөк юлбашсы һәм учителенең быуа ошо аҡыллы күрһәтмәһенә таянып эш итте һәм эш итә һәм коммунизм өсөн көрәштә һәр ваҡыт еңеүгә өлгәшеп килә.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың уңышлы үтәлеүе Ленин — Сталин партияһының яңы гүзәл еңеүе булды. Беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөүҙең иптәш Сталин тарафынан уның 1946 йыл 9 февралдә һөйләгән тарихи телмәрендә билдәләнгән бөйөк программаһы тормошҡа ашырыла.

Бөтә прогрессив кешелек донъяһының бөйөк юлбашсыһы һәм учителе иптәш Сталин тарафынан етәкселек ителгән беҙҙең большевиктар партияһы ҡеүәтле Советтар Союзын ышаныс менән коммунизмдең тантанаһына алып бара.

III.

Социализм өсөн көрәш барышында партия алдына яңы политик бурыстар, яңы теоретик мәсьәләләр килеп баҫтылар. Эшселәр синыфының гениаль аҡыл эйәһе иптәш Сталин үҙенең теоретик хеҙмәттәре менән социализм төҙөүселәрҙең юлдарын яҡтырта, уларҙы асыҡ перспектива һәм еңеүгә өлгәшеү өсөн һайлап алынған юлдың дөрөҫлөгөнә тәрән ышаныу менән ҡоралландыра.

Иптәш Сталиндең хеҙмәттәрендә коммунизм төҙөү өсөн көрәштә төп ҡорал булған пролетариат диктатураһы, социалистик государство тураһындағы [illegible] бөтә яҡлап эшләнгән. Социализмдең йәйелдерелгән һөжүмендә еңеүгә өлгәшеү өсөн ленинизмға ят булған ҡараштарҙы — синфи көрәштең тыныуы, социализм төҙөү осоронда капиталистик ҡамауҙа булған илдә государствоның бөтөүе тураһындағы ҡараштарҙы тар-мар итергә кәрәк ине.

Беренсе биш йыллыҡтың йомғаҡтары тураһындағы докладында һәм партияның XVII съезындағы докладында иптәш Сталин Совет социалистик государствоһын бөтә яҡлап нығытыу кәрәклеген айырыуса көс менән әйтеп үтте. «Государствоның бөтөүе, — тине иптәш Сталин, — государство властен йомшартыу аркылы түгел, ә уны максималь көсәйтеү аркылы килер, уны көсәйтеү үлеп бара торған синыфтарҙың ҡалдыҡтарын бөтөрөп бөтөрөү өсөн һәм әле бөтөрөлөүҙән алыҫ торған һәм тиҙ генә лә әле бөтөрөлмәйәсәк капиталистик ҡамауға ҡаршы оборонаны ойоштороу өсөн кәрәк» (211-се бит).

Ҡороткослоҡ эшләү һәм общественный милекте урлау менән социализмдең базаһын тартҡыларға һәм Совет государствоһын көсһеҙләндерергә маташыусы синфи яҡтан дошман элементтарҙы фаш итеп, иптәш Сталин совет обществоһының нигеҙе булған общественный, социалистик милектең әһәмиәтен теоретик нигеҙләне һәм общественный милекте һаҡлау бурысын партияның үҙәк бурысы, революцион законсылыҡтың нигеҙе итеп күтәрҙе. «Үлеп бара торған синыфтарҙың һуңғы ҡалдыҡтарын туҙҙырыу һәм уларҙың тараҡлыҡ махинацияларын емереү өсөн, — тине иптәш Сталин, — беҙгә хәҙер көслө һәм ҡеүәтле пролетариат диктатураһы кәрәк» (210-сы бит).

Ғөмүмән государство теорияһын һәм айырыуса социалистик государство теорияһын эшләүҙә иптәш Сталиндең партияның XVII съезындағы доклады ғәҙәттән тыш әһәмиәткә эйә булды. Совет государствоһы үҫешенең күп йыллыҡ тәжрибәһен дөйөмләштереү нигеҙендә иптәш Сталин социалистик государство тураһында бер бөтөн һәм тамамланған учение тыуҙырҙы. Иптәш Сталин: капиталистик ҡамау йәшәгән шарттарҙа социалистик революция еңгән ил, әгәр ҙә ул капиталистик ҡамаулыу тарафынан тар-мар ителергә теләмәһә, үҙенең государствоһын, государство органдарын, разведка органдарын, армияһын йомшартмаҫҡа, ә көсәйтергә тейеш, тип әйтә.

Иптәш Сталин үҙенең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән гениаль хеҙмәтендә государствоның бөтөүе тураһындағы марксистик положениене бозоусы начетчиктарҙың һәм талмудсыларҙың лығырҙауҙарының бөтә зарарын күрһәтеп бирҙе.

Иптәш Сталиндең капиталистик ҡамаулыуҙа булған социалистик государствоны бөтә яҡлап нығытыу тураһындағы күрһәтмәләренең совет халҡы өсөн, үҙенең тыуған государствоһын — коммунизмды еңеү өсөн көрәштә төп ҡоралын нығытыу өсөн бер ваҡытта ла көсөн аямаған һәм аямаусы халыҡ өсөн, беренсе дәрәжәлеге әһәмиәте бар. СССР тәжрибәһен өйрәнеп, халыҡ демократияһы илдәрендә коммунистар һәм эшселәр партиялары пролетариат диктатураһы функцияһын үтәүсе халыҡ-демократик государство ҡоролошон бөтә яҡлап нығыталар.

И. В. Сталин ун өсөнсө томға ингән әҫәрҙәрендә партия тарафынан ҡыйратылған троцкисе авантюристарҙың һәм хыянатсыларҙың партия тарихын фальсификациялауҙарын фаш итте. 1931 йылда иптәш Сталин «Пролетарская Революция» журналы редакцияһына «Большевизм тарихының ҡайһы бер мәсьәләләре тураһында» хат яҙҙы, унда ул троцкистарҙың Ленинға, большевиктарға яла ярыуҙарын фаш итте, ленинизмдең һәр төрлө төҫтәге оппортунизмға ҡаршы аяуһыҙ көрәштә тыуыуын, үҫеүен һәм нығыуын, большевиктарҙың оппортунистарҙы һәм центристарҙы аҙағына тиклем тар-мар иткән һәм уларҙы партиянан ҡыуып сығарған донъяла беренсе революцион партия булыуҙарын күрһәтте. Иптәш Сталин үҙенең хатында, троцкизм — Совет государствоһына ҡаршы, СССР-ҙа яңы общество төҙөүгә ҡаршы көрәш алып барыусы контрреволюцион буржуазияның алдынғы отряды ул, тип айырыуса нығыт әйтте. Был хат партиябыҙға идеология фронтында һөжүмде күтәреүгә, троцкисе контрабандистарҙы аҙағына тиклем тар-мар итеүгә ярҙам итте.

Иптәш Сталин бик мөһим бурыс: «...Большевизм тарихы мәсьәләләрен тейешле юғарылыҡҡа күтәреү, партиябыҙҙың тарихын өйрәнеү эшен фәнни рельстарға, большевистик рельстарға ҡуйыу һәм партиябыҙҙың тарихын боҙоусы троцкисе һәм башҡа һәр төрлө фальсификаторҙарға ҡаршы иғтибарҙы көсәйтеү, уларҙың битлектәрен системалы рәүештә йырта барыу» (101-се бит) бурысын ҡуйҙы.

Томда беренсе тапҡыр иптәш Сталиндең Д. Бедныйға хаты нәшер ителгән. Ғәйәт ҙур теоретик һәм политик әһәмиәткә эйә булған был хатта иптәш Сталин Д. Бедныйҙың антипатриотик хаталарын тәнҡитләй. Д. Бедный үҙенең күп кенә фельетондарында бөйөк рус халҡының үткәндәренән нигеҙһеҙ көлөү юлына төшкән, рус эшселәр синыфының революцион хеҙмәттәрен баһаламау юлына баҫҡан. Үҙ халҡын һис белмәгән, уның гүзәл үткәндәрен баһалай һәм хөрмәт итә белмәгән шағир, тип күрһәтә иптәш Сталин. Совет патриотизмы тойғоһонан мах[illegible]

(Аҙағы 3-сө биттә).

И. В. СТАЛИН ӘҪӘРҘӘРЕНЕҢ УН ӨСӨНСӨ ТОМЫ

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

булған шағир героик рус эшселәр синыфы кеүек алдынғы пролетариаттың йырсыһы булыу кимәленә күтәрелә алмай. Иптәш Сталин был хатында совет патриотизмы һәм интернационализмы тураһындағы мәсьәләне ғәйәт ҙур принципиаль юғарылыҡҡа күтәрҙе.

Кешелек тарихында беренсе булып социализмға юл асҡан бөйөк рус халҡы лайыҡлы рәүештә беҙҙең Тыуған илебеҙҙең бөтә халыҡтарының, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең һөйөүе һәм ихтирамы менән файҙалана. Бөйөк рус милләте Советтар Союзының үҙ-ара ҡаҡшамаҫ сталинсә дуҫлыҡ менән бәйләнгән тиң хоҡуҡлы социалистик милләттәренең семьяһында танылған етәксе кеше ул. Совет патриотизменең нәҙе тойғоһо менән дәртләндерелгән, большевиктар партияһы, иптәш Сталин тирәһенә тығыҙ туплаған беҙҙең илебеҙҙең бөтә халыҡтары үҙҙәренең бөтә көстәрен коммунизм төҙөлөшөнә, Совет государствоһының ҡеүәтен нығытыу эшенә бирәләр. Пәшәү кеше биреүсе совет патриотизмы беҙҙең обществобыҙҙың бөйөк хәрәкәт иттереүсе көсө, уңышлы рәүештә коммунизм төҙөүсе совет кешеләренең ижади рухланыуҙарының ҡеүәтле сығанағы булып тора. Совет патриотизмында илебеҙ халыҡтарының милли традициялары бөтә Советтар Союзы хеҙмәтсәндәренең тормош интерестары менән гармоник рәүештә берҙә ҡушыла.

Совет патриотизмы пролетар интернационализм идеяларына тоғролоҡ менән органик бәйләнгән. Иптәш Сталин Демьян Бедныйға яҙған хатында, алдлы великорус пролетарийҙарына милли ғорурлыҡ тойғоһо ят түгел, тигән ленинсә положениене иҫләтеп, Ленинды донъяла иң бөйөк интернационалист тип атай.

Беренсе тапҡыр иғлан ителгән, Бариес әфәндеең хатына яуабында иптәш Сталин: СССР-ҙа «...ят ил кешеләренә, ят ил кешеләре булған өсөн милли күрә алмаусылыҡ йәки дуҫ булмаған мөнәсәбәт күрһәтеү, — закон менән яҙалана» (258-се бит), тип яҙа.

Немец яҙыусыһы Э. Людвиг менән бәседә иптәш Сталин күп кенә теоретик мәсьәләләрҙе: большевиктар партияһының етәксе роле, Октябрь революцияһының бөтә донъя күләмендәге тарихи әһәмиәте, тарихта шәхестең роле, ваҡ буржуаз уровниловканың зарары тураһындағы мәсьәләләрҙе яҡтыртты. Иптәш Сталин был бесәдә рус халҡының бөйөклөгөн күрһәтте, рус тарихының күп кенә мөһим мәсьәләләрен марксистик аңлатты.

Иптәш Сталин үҙенең был томға урынлаштырылған хеҙмәттәрендә хәҙерге этапта колхоз хәрәкәтенең төп формаһы булған артелгә классик билдәләү бирә. XVII съездағы докладында ул, хәҙерге шарттарҙа артель колхоз хәрәкәтенең берҙән-бер дөрөҫ формаһы булып тора, сөнки унда колхозсыларҙың шәхси көн-күреш интерестары уларҙың общественный интерестары менән дөрөҫ ярашалар, шәхси көн-күреш интерестары общественный интерестарға уңышлы яраҡлашалар, шуның менән колхозсыларҙы социалистик тәрбиәләүҙе еңеләйтәләр, тип айырыуса ныҡ әйтте.

Ауыл хужалығы артеленең общественный хужалығын бөтә яҡлап үҫтереү нигеҙендә генә хәҙер беҙ ауыл хужалығы өлкәһендәге төп бурысты — урожайлылыҡты бөтә яҡлап күтәреү, общественный малсылыҡты үҫтереү һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү бурысын уңышлы хәл итеүгә өлгәшә алабыҙ.

Иптәш Сталин ваҡ-буржуаз уровниловканың бөтә зарарлығын күрһәтте, уровниловка яҡлау ҡараштарын тәнҡитләне һәм тиңлек төшөнсәһенә тәрән марксистик билдәләү бирҙе:

«Тиңлек тип марксизм шәхси кәрәктәр һәм көн-күреш өлкәһендәге уровниловканы түгел, ә синыфтарҙы юҡ итеүҙе аңлай, йәғни: а) капиталистар ҡолатылғас һәм экспроприировать ителгәс, бөтә хеҙмәтсәндәрҙе эксплуатациянан тиң азат итеүҙе, б) етештереү средстволары бөтә общество милкенә тапшырылғас, етештереү средстволарына хосуси милкте бөтә кеше өсөн дә тиң рәүештә юҡҡа сығарыуҙы, в) бөтә кешенең дә үҙ булдыҡлылыҡтарына ҡарап хеҙмәт менән шөғөлләнергә тиң бурыслы булыуын һәм бының өсөн бөтә хеҙмәтсәндәрҙең үҙҙәренең хеҙмәттәренә ҡарап алырға тиң хоҡуҡлы булыуын (социалистик общество), г) бөтә кешенең дә үҙ булдыҡлылыҡтарына ҡарап хеҙмәт менән шөғөлләнергә тиң бурыслы булыуын һәм бының өсөн бөтә хеҙмәтсәндәрҙең үҙҙәренең кәрәктәренә ҡарап алырға тиң хоҡуҡлы булыуын (коммунистик общество) аңлай. Бер үк ваҡытта марксизм кешеләрҙең теләктәре (вкус) һәм кәрәктәре социализм осоронда ла, коммунизм осоронда ла сифат яғынан һәм һан яғынан берҙәй һәм тиң булмауы, була ла алмауы нигеҙендә эш итә» (355-се бит).

Был сталинсә положениелар марксистик-ленинсә теорияға яңы ҙур вклад булдылар, улар коммунизм төҙөүселәрҙең ижади эшмәкәрлегендә ҡеүәтле прожектор булып хеҙмәт итәләр.

Милли мәсьәлә теорияһын артабан эшләүҙә XVI съезға Үҙәк Комитеттың политик отчеты буйынса иптәш Сталиндең йомғаҡлау һүҙе ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Милли телдәрҙең бөтөүе һәм социализм бер илдә еңгән осорҙа бер государство рамкаһында уларҙың бер дөйөм телгә ҡушылыуы тураһындағы марксизмға-ленинизмға ҡаршы теорияларҙы тәнҡитләп, иптәш Сталин милли телдәр бер дөйөм телгә социализм бөтә донъя масштабында еңгәндән һуң ғына ҡушылалар, тигән программа положениене нигеҙләне. Иптәш Сталин был положениене үҙенең «Милли мәсьәлә һәм ленинизм» һәм «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән хеҙмәттәрендә бөтә яҡлап үҫтерә.

Иптәш Сталиндең хеҙмәттәре материалистик диалектиканы нисек итеп общественный көрәштәргә анализ яһауҙа ҡулланырға, һәр төрлө догматизмға һәм начетничествоға ҡаршы көрәшергә һәм ленинизм идеяларын ижади үҫтерергә өйрәтәләр. Иптәш Сталиндең әҫәрҙәрендә марксизм—тәбиғәт һәм обществоның үҫеш законлары тураһындағы фән, иҙелгән һәм эксплуатацияланған массаларҙың революцияһы тураһындағы фән, бөтә илдәрҙә социализмдың еңеүе тураһындағы фән, коммунистик общество төҙөү тураһындағы фән артабан үҫтерелгән.

IV.

Партияның XVII съезындағы докладында һәм ун өсөнсө томға урынлаштырылған башҡа әҫәрҙәрендә иптәш Сталин капиталистик донъялағы экономик һәм политик көрәштәргә тәрән фәнни характеристика бирә, халыҡ-ара эшселәр хәрәкәтен ваҡиғаларҙың артабанғы үҫешен асыҡ аңлау менән ҡоралландыра. Бөтә донъя экономик кризисенең хәрәкәтенә характеристика биреп, иптәш Сталин империализмдың ленинсә теорияһын үҫтерә, уны капитализмдың дөйөм кризисе шарттарында общественный үҫештең закондары тураһында яңы положениелар һәм һығымталар менән байыҡтыра. Иптәш Сталин: бөтә донъя экономик кризисынан һуң айырым төрҙәге депрессия башлана, ул промышленностең яңы күтәрелеүенә һәм сәскә атыуына алып бармай, ләкин уны иң түбән төшөү нөктәһенә лә кире ҡайтармай, тип күрһәтә. Билдәле булыуынса, был фәнни алдан күреү капитализм экономикаһының үҫеше менән раҫланды. 1929—1933 йылдарҙағы бөтә донъя экономик кризисы эсынан да айырым төрҙәге депрессияға күсте, унан һуң 1937 йылда яңы экономик кризис башланды.

Иптәш Сталин партияның XVII съезындағы докладында халыҡ-ара обстановкаға тәрән характеристика бирҙе: «Тышҡы политиканың төп элементтары рәүешендә шовинизм һәм һуғыш әҙерләү, киләсәктәге һуғыш фронттарының тылын нығытыу өсөн кәрәкле сара рәүешендә эске политика өлкәһендә эшселәр синыфын ауыҙлыҡлау һәм террор, — был замандағы империалистик политиктарҙың хәҙер иң күп шөғөлләнгән нәмәләре бына шулар» (293-сө бит).

Хәҙер Америка империалистары бөтә донъяға хакимлек итеү өсөн көрәштә, үҙ ваҡытында герман фашистары эшләгән кеүек үк, юғәнһеҙ һуғыш ҡоторонҡолоғон үҫтерәләр, хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлдәренә һәм демократик хоҡуҡтарына һөжүм итәләр, государство власе аппаратын фашислаштыралар.

Герман фашизмына характеристика биреп һәм уның кешелекте ҡырып алмаусы идеяларын һәм бөтә донъяға хакимлеген урынлаштырыу тураһында империалистик Германияның аҡылдан шашҡан пландарын фаш итеп, иптәш Сталин XVII съезда яһаған докладында был баҫып алыу пландарының тулы емерелеүгә осраясағын алдан әйтте. Римдең бөтә донъяға хакимлеҡ итеү пландарының емерелеүен хәтергә төшөреп, иптәш Сталин былай тине: «Бындай һорауҙар тыуа: бөгөнгө «юғары раса» вәкилдәренең дәғүәләре шундай уҡ ҡыҙғаныс һөҙөмтәләргә килтермәйәсәгенә гарантия ҡайҙа? Берлиндәге фашист-әҙәби политиктарҙың, Римдәге иҫке һәм һынылған баҫып алыусыларға ҡарағанда, күберәк бәхеткә ирешә алыуҙарына гарантия ҡайҙа? Киреһенсә булыуын уйлау дөрөҫерәк булмаҫмы?» (296-сы бит).

Империалистар, яңы бөтә донъя һуғышын әҙерләп, Советтар Союзына хәрби һөжүм итеү пландарын төҙөнәләр. Иптәш Сталин империалистарҙың был ҡанлы иҫәптәрен фашланы. 1934 йылдың башында түбәндәге сталинсә һүҙҙәр бөтә донъяға яңғыраны:

«Был һуғыштың буржуазия өсөн иң ҡурҡыныслы һуғыш буласағына шикләнергә мөмкин булырмы икән? Был һуғыштың буржуазия өсөн иң ҡурҡыныслы һуғыш буласағы революция ҡаҙаныштары өсөн СССР халыҡтарының үлгәнсә һуғышасаҡ булыуҙарында ғына ла түгел. Ул һуғыш буржуазия өсөн тағы ла шуның өсөн иң ҡурҡыныслы һуғыш буласаҡ, сөнки ул тик фронттарҙа ғына түгел, бәлки дошмандың тылында ла барасаҡ... СССР-ға ҡаршы икенсе һуғыш — һөжүм итеүселәрҙең тулыһынса еңелеүенә килтерер, Европа менән Азияның бер нисә илдәрендә революцияға һәм ул илдәрҙең буржуаз-помещик хөкүмәттәрен тар-мар итеүгә килтерер, — быға шикләнергә мөмкин булырмы икән?» (297-се бит).

Сталинсә алдан күреү тарихтың бөтә барышы менән раҫланды. Ватан һуғышында совет халҡының бөйөк еңеүе герман фашистарының һәм уларҙы тәрбиәләп үҫтергән Америка-Англия империалистарының һаташҡан пландарын тулыһынса әҙҙе. Совет халҡы большевиктар партияһы етәкселегендә, гениаль юлбашсы һәм полководец иптәш Сталин юлбашсылығында герман фашистарын һәм япон империалистарын тар-мар итте, донъя цивилизацияһын фашист погромщиктарынан ҡотҡарып ҡалды.

Советтар Союзының бөтә донъя әһәмиәтле тарихи еңеүе Европа халыҡтарын фашизм иҙеүенән азат итте, Европа менән Азияның бер нисә илдәрендә халыҡ-демократик ҡоролошто урынлаштырыуҙы тәьмин итте, Азия илдәрендә милли-азатлыҡ хәрәкәттәрен сиҫеп ебәрҙе, Ҡытайҙа халыҡ революцияһының тантанаһына юл асты, Германия Демократик Республикаһын төҙөү Европа тарихында боролош пункты булды. Был еңеүҙәр һөҙөмтәһендә демократия һәм социализмдың ҡеүәтле лагеры барлыҡҡа килде, ул үҙенең даимлы байрағы аҫтына 800 миллиондан артыҡ кешене берләштерә.

Иптәш Сталин ВКП(б)-ның XVII съезындағы докладында Советтар Союзының тыныслыҡ һөйөүсе тышҡы политикаһына бөтә яҡлап характеристика бирҙе:

«Беҙ тыныслыҡ яғында торабыҙ һәм тыныслыҡ эшен яҡлайбыҙ. Ләкин беҙ ҡурҡытыуҙарҙан ҡурҡмайбыҙ һәм һуғыш тоҡандырыусылар ударына удар менән яуап бирергә әҙербеҙ. Кем да кем тыныслыҡ теләй икән, ул һәр ваҡыт беҙҙән булышлыҡ табыр. Ә беҙҙең илгә һөжүм итергә маташыусылар, — беҙҙең совет баҡсаһына киләсәктә үҙҙәренең сусҡа томшоҡтарын тыҡмаҫлыҡ итеп, емергес отпор алырҙар» (305-се бит).

Советтар Союзының тыныслыҡ һөйөүсе аҡыллы сталинсә политикаһы бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең ҡайнар яҡлауы менән файҙалана. Советтар Союзы һәр көн һайын үҫә һәм нығый барған тыныслыҡ, демократия һәм социализм лагерына етәкселек итә. Донъялағы бөтә илдәрҙәге йөҙәр миллионлаған игелекле теләкле кешеләр, бөтә прогрессив кешелек донъяһы Советтар Союзы йөҙөндә тыныслыҡтың бөйөк байраҡсыһын, бөтә донъяла тыныслыҡтың ҡеүәтле терәген күрә. Тыныслыҡты яҡлаусыларҙың бөйөк хәрәкәтенең байрағына түбәндәге рухландырыусы сталинсә һүҙҙәр яҙылған: «Әгәр ҙә халыҡтар тыныслыҡты һаҡлау эшен үҙ ҡулдарына алһалар һәм уны аҙағына тиклем яҡлаһалар, тыныслыҡ һаҡлап ҡалыныр һәм нығытылыр».

Иптәш Сталин, партияның XVII съезында үҙенең тарихи докладын йомғаҡлап, былай тип бик ныҡ әйтте: «СССР эшселәр синыфының капиталистик илдәрҙәге эшселәр синыфы менән булған интернациональ бәйләнештәре, СССР эшселәр синыфының бөтә илдәрҙәге эшселәр менән туғанлыҡ союзы — Советтар Республикаһының көсөнөң һәм ҡеүәтенең нигеҙ таштарынан береһе бына ошо» (378—379-сы биттәр). Иптәш Сталин совет кешеләрен **«Пролетар интернационализм эшенә, бөтә илдәр пролетарийҙарының туғанлыҡ союзы эшенә аҙағына тиклем тоғро булырға»** (379-сы бит) саҡырҙы.

Совет государствоһының бөтә тарихы большевиктар партияһы, иптәш Сталин тарафынан етәкселек ителгән совет халҡының еңелмәҫлек социалистик интернационализм байрағын юғары тотоп барыуы тураһында һөйләй.

Иптәш Сталин партияның XVII съезындағы докладында империалистарҙың коммунизмды бөтөрөүгә, эшселәр синыфының демократик ҡаҙаныштарын юҡ итеүгә маташыуҙарының уңышһыҙлыҡҡа хөкөм ителгәнлеген күрһәтте.

«Марксизм — эшселәр синыфының төп интерестарының фәнни сағылышы ул. Марксизмды юҡ итеү өсөн эшселәр синыфын юҡ итергә кәрәк. Ә эшселәр синыфын юҡ итеү мөмкин түгел. Марксизм аренаға сыҡҡандан бирле 80 йылдан күберәк ваҡыт үтте. Ошо ваҡыт эсендә уны ҡарғаған һәм йөҙәрләгән буржуаз хөкүмәттәр марксизмды юҡ итергә маташып ҡараһылар. Ни килеп сыҡты һуң? Буржуаз хөкүмәттәр килә һәм китә торҙолар, ә марксизм ҡала килде. Ул ғына ла түгел, — марксизм донъяның алтынан бер өлөшөндә тулы еңеүгә ирешә, шуның менән бергә, марксизм тамам юҡ ителгән, тип иҫәпләнгән илдең тап үҙендә еңеүгә ирешә» (377—378-се биттәр).

Советтар Союзының бөтә донъя әһәмиәтле тарихи еңеүҙәре халыҡ демократияһы илдәрендә социализмдың уңышлы төҙөлөүе, Ҡытай халыҡ революцияһының бөйөк еңеүе, бөтә илдәрҙә коммунистар һәм эшселәр партияларының үҫеүе — иң алдынғы, иң революцион учениеның—Маркс—Энгельс — Ленин—Сталин учениеһының тантана итеүе ул.

* * *

Иптәш Сталиндең әҫәрҙәре — бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең иң бөйөк идея достояниеһы ул. Гениаль сталинсә хеҙмәттәрҙең һәр бер юлы хеҙмәтсәндәрҙең бәхете, уларҙы һәр төрлө иҙеүҙән азат итеү, хеҙмәтсәндәрҙең рухи һәм материаль көстәрен сәскә арттырыу тураһында бөйөк хәстәрлек менән һуғарылған.

Совет кешеләре бөйөк юлбашсы һәм уҡытыусыбыҙ иптәш Сталиндең түбәндәге һүҙҙәрен тулҡынланыу менән уҡыйҙар:

«Мин үҙ тормошомдо арнаған бурыс икенсе синыфты, атап әйткәндә — эшселәр синыфын юғары күтәреүҙән тора. Был бурыс ниндәй ҙә булһа «милли» государствоны нығытыуҙан түгел, ә социалистик государствоны һәм тимәк — интернациональ государствоны нығытыуҙан ғибарәт, шул уҡ ваҡытта был государствоны һәр төрлө нығытыу бөтә халыҡ-ара эшселәр синыфын нығытыуға булышлыҡ итә. Әгәр ҙә минең эшселәр синыфын юғары күтәреү һәм был синыфтың социалистик государствоһын нығытыу буйынса эшемдә һәр бер аҙымым эшселәр синыфын нығытыуға һәм уның хәлен яҡшыртыуға йүнәлтелмәгән булһа, үҙ тормошомдо маҡсатһыҙ тип иҫәплар инем» (105-се бит).

Иптәш Сталиндең эшселәр синыфына, совет халҡына, бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәренә уның сикһеҙ мөхәббәтен сағылдырыусы был рухландырыусы һүҙҙәре коммунизм өсөн көрәшселәрҙең гигант күләмдәге бөтә армияһын коммунистик төҙөлөш эшенә фиҙакәр һәм үҙ-үҙенде аямай хеҙмәт итеүгә саҡыралар.

Ленин менән Сталин хеҙмәттәре — бөтә кешелек донъяһына яҡты киләсәккә, бәхеткә, коммунизмдың тантана итеүенә дөрөҫ юлды яҡтыртыусы һүнмәҫ маяҡ улар.

А. Азизян,
П. Сатюков.

Черниковск калаһының партия активе йыйылышы

Черниковск ҡалаһының партия активе йыйылышы булып үтте. Унда ҡаланы төҙөкләндереү тураһындағы мәсьәлә тикшерелде. Был мәсьәлә буйынса хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала Советы исполкомы председателе иптәш Попков доклад менән сығыш яһаны.

Докладсы һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ эсендә Черниковск ҡалаһының үҫеше һәм ҡаланы төҙөкләндереү буйынса өлгәшелгән уңыштар тураһында һөйләп үтте. Һуңғы биш йыл эсендә ҡалала 170 мең квадрат метрҙан артығыраҡ торлаҡ майҙаны төҙөлөп эксплуатацияға тапшырылған. Бик күп һанда мәктәптәр, дауалау учреждениелары, клубтар һәм башҡа төрлө культура көн-күреш биналары һалынған. Ҡаланы төҙөкләндереү буйынса ла күп кенә эштәр башҡарылған.

Ҡаланы артабан үҫтереү һәм төҙөкләндереү буйынса 1951 йылға билдәләнгән бурыстарға туҡталып, иптәш Попков былай тине:

— Быйыл ҡалала 55 мең квадрат метрҙан артығыраҡ яңы торлаҡ майҙаны төҙөлөп эксплуатацияға тапшырылырға тейеш. Бынан башҡа ике мәктәп, дүрт урынлы балалар баҡсаһы, ес урынлы балалар яслеһе, больница, поликлиника, мунса һәм башҡа төрлө культура көн-күреш учреждениелары һалына. 1951 йылда ҡалала 97 мең квадрат метр яңы юл һәм тротуар төҙөлөп, уның байтаҡ өлөшө асфальт менән ҡапланырға тейеш.

Ошо уңыштар менән бергә, — тип билдәләне докладсы, — беҙҙең эшебеҙҙә ҙур ғына етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Ҡаланы төҙөкләндереү эштәренең планы сиктән тыш насар үтәлә. Ошо йылдың биш айы эсендә ҡаланың төҙөлөш ойошмалары ни бары 5 мең 800 квадрат метр торлаҡ майҙанын эксплуатацияға тапшырғандар. Был йыллыҡ пландың 11 процентын ғына тәшкил итә. Черниковск төҙөлөш тресы (управляющийы иптәш Рудаков) был ваҡыт эсендә бер генә квадрат метр майҙанды ла эксплуатацияға тапшырмаған. Төҙөлөш графигы үтәлмәй, һәр бер объектте билдәләнгән срогына төҙөп тапшырыу саралары күрелмәй.

Культура — көн-күреш учреждениелары төҙөү һәм посёлкаларҙы, урамдарҙы төҙөкләндереү эштәре бигерәк тә һуҙлып бара. Нефтселәр дворецын төҙөй башлау өсөн техник документация әле булһа әҙер түгел. Быйыл эксплуатацияға тапшырылырға тейеш булған поликлиниканың бинаһының котлованы уҙған көҙҙә уҡ ҡаҙыла башлағайны, ләкин уның бөгөнгө көнгә тиклем нигеҙе лә һалынмаған әле. 880 уҡыусы һыйҙырышлы мәктәп 15 июлгә төҙөлөп бөтөргә тейеш ине, ә уның әле булһа түбәһе лә ябылып бөтмәгән. Штукатура эштәре башланмаған. Мәктәпте төҙөү графигы үтәлмәй. Тоньҡ посёлка баҙарын, ҡала паркын, «Победа» кинотеатры районын төҙөкләндереү, нефть эшкәртеү заводынан Социалистик городокка тиклем асфальтлы тротуар төҙөү һәм ЦЭС районында юл төҙөү кеүек ҙур күләмдәге эштәр башланмаған да әле. «Дубитель» заводы, шырпы фабрикаһы, фанера комбинаты һәм башҡа предприятиеларҙың етәкселәре ҡаланы төҙөкләндереү буйынса үҙҙәренә йөкмәтелгән эштәрҙе башҡарыу сараһын күрмәйҙәр.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа бөтәһе 10 кеше сығып һөйләне. Улар ҡаланы төҙөкләндереү эшендә булған күп кенә етешһеҙлектәрҙе асып, ҡаты тәнҡитләнеләр һәм хеҙмәтсәндәрҙең культуралы тормош шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтелгән ҡиммәтле тәҡдимдәр индерҙеләр.

— Беҙҙең ҡала йылдан-йыл үҫә һәм матурлана бара, — тине нефть эшкәртеү заводының завком председателе иптәш Мамин. — Ләкин шуныһы үкенесле, беҙ үҙебеҙҙең ҡалабыҙ менән бергә барлыҡҡа килгән культура байлыҡтарын һаҡлай белмәйбеҙ. Асфальт юлдарҙы һәм тротуарҙарҙы эксплуатациялауҙа тейешле тәртип һәм культура булмағанлыҡтан, йыш ҡына, улар бысраҡ менән күмелә, уларҙың өҫтөнән тракторҙар һәм башҡа төр ауыр транспорт машиналары үтеп емереп бөтөрәләр. Ҡаланың коммуналь хужалыҡ бүлеге етәкселәре быны күрмәйҙәр.

— Беҙҙең төҙөлөш ойошмалары, — тине ҡаланың баш архитекторы иптәш Куприянова, — төҙөлгән йорттар эргәһен төҙөкләндереү эштәрен бер юлы алып бармайҙар. Тәүҙә юлдар, тротуарҙар ваҡытлыса ғына эшләнә, йортто эксплуатацияға тапшырғас ҡына улар әр-аңынан төҙөлә башлайҙар. Икеләтә эшләү бик күп расход һәм артыҡ эш көсө талап итә.

Партия активы йыйылышы ҡаланы төҙөкләндереү өлкәһендә партия ойошмаларының эшен көсәйтеүгә йүнәлтелгән конкрет ҡарар ҡабул итте.

М. Мостафин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Хеҙмәтсәндәрҙең хаттарына яуапһыҙ ҡараш

Партия һәм хөкүмәт хеҙмәтсәндәрҙең сигналдарына һәм жалобаларына ҙур иғтибар биреүҙе һәм уларҙы тиҙ ҡарап хәл итеүҙе талап итә. Ә прокуратура органдары был эштең һәр бер учреждение тарафынан теүәл тормошҡа ашырылыуын күҙәтеп барырға тейеш. Ләкин Хәйбулла район прокуратураһында беҙ бының киреһен күрәбеҙ. Ул хеҙмәтсәндәр тарафынан үҙенә килгән жалобаларҙы айҙар буйына ҡарамайынса ятҡыра.

Ауыл хәбәрселәренән район «Ҡыҙыл байраҡ» газетаһы редакцияһына килгән ике хат тикшереү һәм ғәйепле кешеләргә сара күреү өсөн район прокуратураһына ебәрелгәйне. Уларҙың береһендә һүҙ ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоусылар һәм общественный милкте туҙҙырыусылар тураһында, ә икенсеһендә эшкә тулмаусылар, тәртип боҙоусылар тураһында бара.

Хаттың тәүгеһе уларға бынан ике ай элек, икенсеһе дүрт ай элек ебәрелгән булһа ла, әлегә тиклем тикшерелеп хәл ителгәндәре юҡ. Был тәнҡит материалдары прокурор вазифаһын үтәүсе иптәш Яғанзееваның папкаһында баҫтырылып ятҡырыла.

Хәйбулла район прокуратураһы работниктарының хеҙмәтсәндәр хаттарына, сигналдарына бындай яуапһыҙ ҡарауҙары беҙҙе бик ғәжәпләндерә.

Р. Шафикова.
«Ҡыҙыл байраҡ» газетаһы сотрудниге.

Газета һәм журналдар үҙ ваҡытында тапшырылмай

Учалы районында связь эшенең насар ҡуйылыуы, подписчиктарҙы хеҙмәтләндереүгә иғтибар бирелмәүе тураһында күп кенә сигналдар булды. Ләкин район связь бүлеге работниктары бынан үҙ эштәренә тейешле һығымта яһамаһылар. Шуның һөҙөмтәһендә етешһеҙлектәр һаман да дауам итеп килә.

Быға миҫал итеп райсвязьдең Муллаҡай бүлексәһенең эшен күрһәтергә мөмкин. Был бүлек работниктарының ғәйебе менән Поляков һәм Сәфәр ауылдарында йәшәүсе подписчиктар үҙҙәренең газета һәм журналдарын тулыһынса һәм үҙ ваҡытында ала алмайҙар. Хатта газеталарҙың айырым номерҙары подписчиктарға бөтөнләй тапшырылмай.

1951 йылдың башында Илсе ете йыллыҡ мәктәбе коллективы «Совет мәктәбе» журналын, политик һәм фәнни белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз обществаһы тарафынан сығарыла торған лекцияларҙың икенсе серияһын яҙҙырғайны. Ләкин әлегә тиклем уларҙың береһе лә килгәне юҡ.

З. Әһлиуллин.

Клуб ташландыҡ хәлдә

Ғафури районы «Йондоҙ» колхозының 6-сы бригадаһындағы клубта колхозсыларға культура хеҙмәте күрһәтеү буйынса бер ниндәй ҙә эш алып барылмай. Клубтың сәхнәһе, мейесе емерек һәм тәҙрәләре ватыҡ. Ике йыл буйына уны ҡап һыуғыу мастерскойы итеп файҙаландылар.

Уҙған йылда мәктәп балалары көсө менән клуб эргәһендә 50 төп ағас ултыртылғайны һәм кәртәләнеп алынғайны. Ләкин ул ағастарҙың береһе лә ҡалманы, кәртә ағастарын да һәр төрлө кәрәк-яраҡҡа тотоноп бөттөләр.

З. Ишбулдин.

„Кыҙыл Башкортостан" материалдары буйынса

„Цехта бракка ҡаршы көрәш юҡ"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 63-сө номерында Өфө паровоздар ремонтлау заводының тәгәрмәстәр цехында техниканың тулы файҙаланылмауы һәм етештерелгән продукцияның сифаты түбән булыуы тураһында хәбәр баҫылғайны. Был хәбәр заводтың партия комитеты тарафынан тикшерелеп, газетала күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ҡарата саралар билдәләнгән.

Паровоздар ремонтлау заводының партия комитеты секретары иптәш Никулиндең редакцияға хәбәр итеүенсә, һуңғы көндәрҙә асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса практик эш алып барыла.

„Кинокартиналар регуляр күрһәтелмәй"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 8-се апрель номерында Абзан районында хеҙмәтсәндәргә кинокартиналар күрһәтеү эшенең насар ҡуйылыуы, кинофикация бүлегенең планһыҙ эш алып барыуы һәм киномеханиктар араһында хеҙмәт дисциплинаһының түбән булыуы тураһында хәбәр баҫылып сыҡҡайны.

Ошо айҡанлы Абзан район Советы исполкомы редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Кинокартиналар регуляр күрһәтелмәй» тигән хәбәр район Советы исполкомы тарафынан тикшерелеп, унда күрһәтелгән фактлар бик урынлы һәм ваҡытлы тип табылды. Колхозсыларҙы кинокартиналар менән хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу маҡсатында практик саралар күрелә».

Алдынғы тәжрибәләр трибунаһы

ЛЮЦЕРНА ҮҪТЕРЕҮҘӘ БЕҘҘЕҢ ТӘЖРИБӘ

Йомағужа районы колхоздарында үлән сәсеү эше менән беҙ 10 йылдан бирле шөғөлләнәбеҙ инде. Беҙҙең «Красный украинец» колхозы был осор эсендә люцерна сәсеү эшен үҙләштереү өлкәһендә байтаҡ тәжрибә туплай алды.

Люцерна сәсеүҙең тәүге йылдарында колхоз етәкселәре был ҡиммәтле культураның әһәмиәтен баһалап еткермәй инеләр. Ул ваҡытта үлән сәсеүҙә агротехника саралары ла бик аҙ ҡулланыла ине. Ошоноң һөҙөмтәһендә люцернаның урожайлылығы бик түбән булды, уның орлоғоноң сифаты насар ине. 1948 йылда һәр бер гектар майҙандан 20 килограмм, 1949 йылда — 35-әр килограмм һәм бары тик 1950 йылда ғына бер центнерға яҡын орлоҡ алынды.

Люцернаның ошолай түбән урожай биреүе район колхоздарының йылдан-йыл үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндерә алманы, билдәле, күп йыллыҡ үлән орлоҡтарын йыл һайын башҡа райондарҙан алып торорға тура килде. Бары тик 1950 йылда ғына, совет агробиология фәненең ҡаҙаныштарын ҡулланыу һәм агротехника сараларын дөрөҫ файҙаланыу һөҙөмтәһендә, районды бөтә колхоздары ла гектарына 2—3 центнер иҫәбенән орлоҡ менән тәьмин ителделәр. Ошолай итеп барлыҡ ауыл хужалыҡ артелдәрендә лә люцерна сәсеү өсөн реаль мөмкинлектәр булдырылды.

Йылдар буйына тупланған тәжрибә люцернаның бары тик таҙа тупраҡта ғына яҡшы үҫеүен күрһәтте. Тимәк, люцерна сәселә торған майҙан ҙур ентеклелек менән яҡшы сифатлы итеп эшкәртелергә тейешле. Был баҫыуҙа ҡый үләндәре ҡалдырыуға юл ҡуйырға ярамай. Аҡтамыр люцернаның иң үҫал дошманына һанала. Ошоноң өсөн уға ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә кәрәк. Ҡый үләндәренән яҡшы таҙартылған ерҙә бик ҡоро булған 1949 йылда ла люцерна матур үҫте, һәм, киреһенсә, ҡый үләнле участкаларҙа 1950 йылда люцерна бик һирәк булды. Сәсеү ойлаһешендә люцерна сәсеү өсөн иң яҡшы баҫыу булып арыш аҫты баҫыуы иҫәпләнә. Беҙ уны предплужникле һабандар менән 25—28 сантиметр тәрәнлегендә көҙ көнө һөрәбеҙ. Тупраҡ ентекле эшкәртелгәс кенә беҙ люцернаны сәсәбеҙ. Минеңсә, люцернаны ҙур майҙандарҙа сәскес машиналары менән тоташ сәсеү иң ыңғай ысул булып тора. Бының өсөн люцернаның орлоғо күп булырға һәм уның өҫтөнә бойҙай сәселергә тейеш. Беҙ ошолай эшләйбеҙ ҙә.

Сәсеү срокттарына бик ҙур иғтибар итергә кәрәк. Беҙ уны яҙғы сәсеү эштәренең тәүге көнөнән 3 — 5 көн һуң сәсәбеҙ. Бынан һуңға ҡалыу люцернаның насар урожай биреүен күрһәтте. Был саҡта люцерна һирәк булып сыға һәм ҡай саҡ бик ыңғай йылда ла бөтөнләй тип әйтерлек һәләк була. Люцернаны тигеҙ сәсеүгә өлгәшеү маҡсатында сәсеү алдынан уның орлоғон бойҙайға ҡушып бутайбыҙ һәм бер центнер бойҙайға 5—7 литр иҫәбенән һыу менән сылатабыҙ. Люцерна өҫтөнә сәселә торған культураның сәсеү нормаһын 10 — 15 процентҡа кәметәбеҙ һәм уны 3-4 сантиметрға һай итеп сәсәбеҙ. Ошо ысул менән эшләү нигеҙендә тәүге йыл сәселгән люцернаның шәберәк үҫеүенә өлгәшелә.

Люцернаны тәрбиәләү комплексында беренсе нәүбәттәге мөһим сара булып яҙ ҡамыл ҡалдыҡтарын таҙартыу иҫәпләнә. Унан һуң люцерна баҫыуын ауыр тырмалар менән ике әҙҙән тырматабыҙ, икенсе йыл үҫкән үлән сәсеүлеген дисковать итәбеҙ. Люцерна сәсеүлектәрендәге ҡыйҙарҙы утау юғары урожай өсөн көрәштә баһалап бөтөргөһөҙ сараларҙан һанала. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, был сара колхоздарҙа баһаланып еткерелмәй әле. Былтыр беҙ люцерна өҫтөндәге эре ҡыйҙарҙы йолҡоп сығыу менән генә сикләндек, люцерна өсөн эре ҡыйҙар ғына түгел, ә уның сәсеүлегендә күренмәй үҫеп ятҡан ваҡ ҡыйҙар ҡурҡыныс булып торалар. Сөнки уларҙың орлоҡтарын люцерна орлоғонан айырыу бик ауыр. «ОС—1» кеүек бик ҡулайлаштырылған орлоҡ таҙартыу машинаһы ла уларҙы айырып бөтөрә алмай. Ошоноң һөҙөмтәһендә ҡиммәтле үлән орлоғо юҡҡа сығарыла.

Люцерна үләненән күп орлоҡ алыуға өлгәшеү уны һеркәләндереүгә тығыҙ бәйләнгән. Һеркәләнмәгән майҙанда бик күп сәскә ҡойола. Бының һөҙөмтәһендә хатта бик яҡшы үҫкән үләндәрҙән дә орлоҡ алып булмай. Был хәлгә юл ҡуймау өсөн люцернаға өҫтәмә һеркәләндереү үткәрәбеҙ.

Бал ҡорттары люцернаны иң яҡшы һеркәләндереүселәр булып торалар. Улар ҙур теләк менән люцерна сәскәһенә ҡуналар. Былтыр бал ҡорттары тарафынан һеркәләндерелгән люцерна, һеркәләндерелмәгән участкаға ҡарағанда, 2 тапҡыр күберәк урожай бирҙе.

Беҙҙең тәжрибә, сәсеүлектең 90 — 95 проценты өлгөргәс урып йыйғанда үләнде һуғыу, орлоғон таҙартыу, киптереү процестары байтаҡҡа еңеләйә икәнлеген күрһәтә. Беҙ люцернаны комбайн менән урып йыйнайбыҙ. Һуғылмаған орлоҡ комбайн бункерынан туранан-тура махсус урынға ташыла һәм тейешенсә эшкәртелә. Орлоҡ таҙартыу «ОС—1» машинаһында үткәрелә.

А. Котельников,
Йомағужа районы «Красный украинец» колхозы агрономы.

Шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүселәр

Ҡырмыҫҡалы районының «Октябрь» ауыл хужалығы артеле—шәкәр сөгөлдөрө үҫтереү буйынса республикала алдынғы колхоз ул. Был артелдең председателе Садыҡов һәм агрономы Сахарова иптәштәрҙең тырышлыҡтары һөҙөмтәһендә, колхозсылар был ҡиммәтле культураны үҫтереүҙә яҡшы уңыштарға өлгәштеләр. Һөҙөмтәлә колхоз унан йыл һайын юғары урожай ала. 1950 йылда колхоз сөгөлдөр сәсеүлегенең һәр гектарынан 178-әр центнер урожай алды. Иптәш Рәйфә Садыҡова етәкселек иткән шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүсе звено һәр гектарҙан 294 центнер урожай үҫтереп алды.

Иптәш Рәйфә Садыҡова звеноға етәкселек итеү менән бергә, үҙе 0,5 гектар майҙанда шәкәр сөгөлдөрө участкаһын тәрбиәләне. Был майҙандан 166 центнер урожай алынды. Шулай итеп, был һәр гектарҙан 332-шәр центнер урожай алыу тигән һүҙ. Ә шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүсе күрше колхоздарҙа һәр гектарҙан алынған бындай урожай ни бары 60 центнер тәшкил итә.

Иптәш Садыҡованың шәкәр сөгөлдөрөнән юғары урожай үҫтереүҙәге уңыштары, звенола хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу һәм агротехник саралар комплексен тулыһынса үткәреү менән яулап алынды. Шәкәр сөгөлдөрө үҫтереләсәк майҙан көҙҙән үк яҡшы сифатлы итеп тунға һөрөлдө, ҡыш ҡар тотолдо, урындағы һәм минераль ашламалар әҙерләнде, яҙ ҡар һыуҙары тотолдо, дым тотоу маҡсатында ерҙе яҙ менән ер тырматылды, сәсеү алдынан тупраҡҡа ашламалар индерелде, тупраҡ яҡшы итеп эшкәртелде, сифатлы итеп сәсеү үткәрелде, унан һуң тупраҡ тығыҙландырылды, йәй даими рәүештә тәрбиәләнде.

Иптәш Садыҡова урожай алыу планын арттырып үтәгәне өсөн хеҙмәт көндәренә өҫтәмә түләү тәртибендә 98 килограмм шәкәр алды. Колхоз правлениеһе бүләкләү тәртибендә уға тағы ла 55 килограмм шәкәр бирҙе. Шулай итеп, иптәш Садыҡова үҙенең намыҫлы хеҙмәттәре өсөн бөтәһе 9 бот шәкәр алды.

«Октябрь» колхозы шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүҙән ҙур доход алып килә. 1949 йылда колхоз был ҡиммәтле культуранан 24 мең 500 һум аҡсалата һәм 1.745 килограмм шәкәрләтә доход алһа, 1950 йылда бындай доход аҡсалата 52 мең 15 һум һәм натуралата 3.464 килограмм шәкәр тәшкил итә.

Ҡырмыҫҡалы районының «Октябрь» колхозы шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүҙә яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкәне өсөн Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашыуға кандидат итеп раҫланды.

Ғ. Хәбибуллин.

ФУТБОЛ

РСФСР беренселеге өсөн ярыш

30 майҙа Өфө ҡалаһының «Динамо» стадионында Урал зонаһының икенсе группаһы буйынса РСФСР беренселеге өсөн нәүбәттәге футбол ярышы булды. Матчта Өфөнөң «Динамо» һәм Краснокамск ҡалаһының «Красная звезда» командалары ҡатнаштылар.

Һауа торошо насар булыуға ҡарамаҫтан, уйын бик ҡыҙыу темп менән башланып китте. Ярыштың тәүге минутынан уҡ инициативаны ҡунаҡтар яулап алды. Улар беренсе таймда «Динамо» ҡапҡаһына ике туп индерҙеләр. Матчтың икенсе яртыһында Краснокамск командаһы «Динамо» ҡапҡаһына тағы ла өс туп индерҙе.

Уйын 5:0 иҫәбе менән «Красная звезда» командаһы файҙаһына тамамланды.

И. Гершев.

Черниковск ҡалаһындағы нефтселәр баҡсаһының тышҡы күренеше. М. Әхмәтйәнов фотоһы.

Телефон аша Ташкент менән һөйләшеү

Башҡорт Академия театры гастролдәре уңышлы дауам итә

Кисә «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы хәбәрсеһе Өфөнән телефон аша Ташкент менән һөйләште.

Өфө: Театр коллективына тыуған республиканан сәләм. «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы уҡыусылары Ташкент халҡы сәхнәләрендә Башҡорт культураһы вәкилдәренең эше менән ҡыҙыҡһыналар. Күптән түгел гастролдә РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Бәдәр Юсопованың Ташкенттә гастролдәрҙең тәүге көнө тураһында яҙған хатын баҫып сығарҙыҡ. Уҡыусылар был хәбәрҙе йылы ҡаршыланылар.

Ташкент: Тәүге көндә өлгәшелгән уңыштар артабан дауам итә. Театр коллективы Ташкент тамашасылары, туғандаш үзбәк халҡы тарафынан [illegible] ҡабул ителә. Башҡорт халҡының культураһы, театр искусствоһы менән ҡыҙыҡһыныусы кеше бик күп. [illegible] 15 спектакль ҡуйылды, тамашасылар уларҙы [illegible] ҡарайҙар. Башҡорт театры [illegible]. Культура фронты кешеләре, Үзбәк театры деятелдәре туғандаш халыҡтар араһында дуҫлыҡты артабан нығытыуға, культура алмашыуға [illegible].

Өфө: Театр коллективы өсөн бер яңылыҡ бар: һеҙҙең репертуарҙа булған «Башмагым» музыкаль комедияһы авторы Хәбибулла Ибраһимовҡа Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумының 28 майҙағы Указы менән Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле исеме бирелде.

Ташкент: Гастролдә ҙур уңыш менән файҙаланған «Башмагым» авторына коллектив исеменән [illegible] тәбрик [illegible].

Өфө: Гастролдең барышы тураһында артабан даими хәбәр итеп тороуығыҙҙы һорайбыҙ һәм гастролде уңышлы тамамлап, тыуған республикаға ҡайтыуығыҙҙы көтәбеҙ.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Нуриман районы Карл Маркс исемендәге [illegible] Нуриман МТС-ының 2-се номерлы трактор бригадаһы трактористары М. Садретдинов һәм Гәделшин иптәштәр яҙғы баҫыу эшендә [illegible].

Улар эш нормаларын систематик арттырып үтәп, [illegible].

Иптәш Садретдинов дизель тракторында эшләп, смена нормаһын 150 процентҡа еткереп үтә. Ул 12 сменала 19 сменаның нормаһын үтәне. Гәделшин иптәш 12 сменала 16 смена нормаһын үтәне. Эштең сифаты яҡшы.

И. Дәүләтбаев.

* * *

Бәләбәй районындағы «20 йыл Октябрҙә», «Верный путь», Чапаев, Маленков исемендәге колхоздар государствоға ит тапшырыуҙың ярты йыллыҡ планын 130—150 процентҡа үтәнеләр.

Хәҙер был колхоздар йыллыҡ планды июнь айында үтәү өсөн көрәшәләр.

Х. Абдуллин.

* * *

[illegible] Н. Ибраһимов («Булак» колхозы), А. Мөхәмәтов («Урал» колхозы) һәм Б. П. Петухов («Красный горняк» колхозы) иптәштәр [illegible] Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы тарафынан диплом [illegible].

А. Абсаттаров.

Раевка. Иптәш Алехин хәҙер алтынсы йыл [illegible] колхозда [illegible] угә бәтәһе 395 баш һарыҡ беркетелгән. Ул быйыл 160 баш һарыҡтан 250 баш үрсем алып, бәтәһен дә ҡарап үҫтерҙе. Уның менән бергә эшләүсе иптәш Алцаев та һарыҡтар тәрбиәләүҙә үҙенә йөкмәтелгән бурысты намыҫ менән башҡара.

Ғ. Ғәйнетдинова.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 31 май. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһе 31 майҙа, бөтә фронттарҙа ла Халҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Америка-Англия интервенционистик ғәскәрҙәренең ныҡлы контратакаларын уңышлы кире ҡағалар, уға йәнле көстә һәм техникала ауыр юғалтыуҙар яһайҙар, тип хәбәр итте.

Бик ҙур юғалтыуҙарҙан һуң дошман Хвачгонь (Касен) ҡалаһы районына сыға алды.

31 майҙа Хамхын ҡалаһы өҫтөндә дошмандың дүрт истребителе атып төшөрөлдө.

Мао Цзе-дунда ҡабул итеүҙә Панчен-Ламаның һәм Тибет хөкүмәте делегацияһы етәксеһенең белдереүе

ПЕКИН, 29 май. (ТАСС). Синьхуа агентствоһы былай тип хәбәр итә: Ҡытай халҡ республикаһы үҙәк халҡ хөкүмәте менән Тибеттең урындағы хөкүмәте араһында килешеүгә ҡул ҡуйыу хөрмәтенә ҡабул итеүҙә сығыш яһаған Панчен-Лама былай тип белдерҙе:

«Ҡытайҙа йәшәгән милләттәр проблемаһы һәм күп йылдар буйына хәл ителә алмаған Тибет мәсьәләһе хәҙерге ваҡытта Ҡытайҙағы бөтә милләттәрҙең бөйөк халҡ юлбашсыһы — председатель Мао Цзе-дун етәкселегендә уңышлы хәл ителде».

Унан һуң сығыш яһаған Тибет делегацияһының етәксеһе Калон Нгабо Нгаванг Джигме былай тип белдергән:

«Бөгөн беҙҙең тыныс һөйләшеүҙәребеҙ уңышлы тамамланды. Ҡытайҙың бөтә туғандаш милләттәренең быға тиклем күрелмәгән берҙәмлегенә өлгәшелде. Беҙҙең илебеҙ тарихында беренсе тапҡыр шулай уҡ Тибеттең берләшеүенә өлгәшелде. Быларҙың бөтәһенә лә председатель Мао Цзе-дундың етәкселеге арҡаһында өлгәшелде. Беҙ председатель Мао Цзе-дун етәкселеген ҡайнар яҡлайбыҙ.

Ҡытайҙың бөтә милләттәренең бөйөк халҡ юлбашсыһы — председатель Мао Цзе-дун һаулығына тост иғлан итәм. Далай-Лама менән Панчен-Лама берҙәмлеге һәм һаулығы өсөн тост иғлан итәм».

Тибетте тыныс азат итеү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыу айҡанлы Ҡытайҙың демократик партияларынан Мао Цзе-дунға ҡотлау хаттары

ПЕКИН, 31 май. (ТАСС). Синьхуа агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Ҡытайҙың демократик партиялары Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыу айҡанлы Мао Цзе-дунға ҡотлау хаттары ебәргәндәр.

Ҡытайҙың демократик лигаһы хатында, лига үҙенең члендарын килешеүҙе тулыһынса тормошҡа ашырыуға бөтә көстәрен һалырға саҡырҙы, тип әйтелә. Милли реконструкциялауҙың демократик ассоциацияһы, председатель Мао Цзе-дун етәкселегендә Тибет халҡы Ҡытайҙың башҡа бөтә милләттәре менән союзда яҡты һәм бәхетле киләсәккә табан юл менән йылдам хәрәкәт итәсәк, тип белдерә. Ҡытайҙың эшсе-крәҫтиән демократик партияһы, килешеүгә ҡул ҡуйыу империалистарҙың Тибетте үҙенең тыуған иленән айырып алыуға йүнәлтелгән уйҙарын өҙҙө, тип белдерә.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 31 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 31 майҙа сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары 64-се ултырышҡа йыйналдылар. АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Беренсе булып һүҙ алып, Джессеп АҠШ хөкүмәтенең Советтар Союзы хөкүмәте адресына ебәрелгән нотаһын СССР делегацияһына тапшырыу тураһында үҙ хөкүмәтенән инструкция алыуын белдерҙе. Ул был нотаның тексын уҡып сыҡты, унда, әҙерлек кәңәшмәһендә үҙ-ара ҡабул ителерлек көн тәртибенә ҡарата килешеүгә өлгәшелмәне, тип билдәләнелә һәм өс держава делегациялары тарафынан 2 майҙа тәҡдим ителгән көн тәртибенең өс вариантының береһе нигеҙендә 23 июлдә Вашингтонда министрҙар кәңәшмәһен саҡырырға тәҡдим ителә.

Франция вәкиле Пароди һәм Великобритания вәкиле Дэвис, беҙҙең хөкүмәттәребеҙҙән СССР Хөкүмәтенә ошондай уҡ нотаҙарын СССР делегацияһына тапшырыу тураһында үҙ хөкүмәттәребеҙҙән инструкциялар алдыҡ, тип белдерәләр.

А. Громыко, нотаны өҫтән генә уҡып сыҡҡан ваҡытта ла көнбайыштағы өс держава хөкүмәттәре ноталарының тексттарында дөрөҫ булмаған урындар бар, тип билдәләне. Ноталарҙа, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар йәнәһе, Атлантик пакт тураһындағы пункттан башҡа, көн тәртибенең башҡа бөтә пункттары буйынса ла килешеүгә өлгәштеләр, тип күрһәтелә, ләкин, тине Громыко, совет делегацияһы үҙенең белдереүҙәрендә, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһында совет тәҡдиме буйынса килешеүгә өлгәшелгән ваҡиғала ғына, өс держава тәҡдимдәренең «В» вариантындағы көн тәртибенең башҡа пункттарын килешелгән, тип иҫәпләргә мөмкин, тип күрһәткәйне.

Громыко шулай уҡ, совет тәҡдиме Атлантик пакт һәм Европаның һәм Яҡын Көнсығыштың күп кенә илдәрендә Американың хәрби базалары тураһындағы пунктты көн тәртибенә индереүҙе күҙ тотҡан ваҡытта, өс держава ноталарында Американың хәрби базалары тураһында бер нәмә лә әйтелмәгән, тип күрһәтте.

Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләнең өҫтәлгә килгәндә, тип өҫтәне Громыко, совет делегацияһының позицияһы яҡшы билдәле, СССР делегацияһы, Атлантик пактты төҙөү һәм Европаның һәм Яҡын Көнсығыштың күп кенә илдәрендә Американың хәрби базаларын булдырыу Европала йәшәгән халҡ-ара көсөргәнешлектең төп сәбәбе булып тора һәм шуға күрә был мәсьәлә сит ил эштәре министрҙәре Советының сессияһында ҡаралырға тейеш, тип күп тапҡырҙар күрһәткәйне инде.

Громыко һуңынан, АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең ноталары Совет хөкүмәте иғтибарына еткереләсәк, тип белдерҙе.

АҠШ вәкиле Джессеп киләһе ултырышты 4 июнгә билдәләргә тәҡдим итте.

Тынныслыҡ пакты өсөн!

ФРАНЦИЯ

«Юманите» газетаһы, биш бөйөк держава араһында Тынныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тынныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡул тамғалары йыйыу буйынса кампанияның беренсе һөҙөмтәләрен дүрт держава вәкилдәренә белдереү, шулай уҡ Тынныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтен яҡлау тураһында Сена һәм Уаза департаменты муниципаль советтәренең һәм генеральный советтәренең резолюцияһын һәм халҡ йыйылыштары протоколдарын тапшырыу өсөн Сена һәм Уаза департаментының Тынныслыҡ Советы делегацияһы 30 майҙа АҠШ, Великобритания һәм Советтар Союзы посольстволарына барҙы, тип хәбәр итә.

Газета, делегация тик Совет посольствоһында ғына ҡабул ителде, тип билдәләй. Совет посольствоһының вәкиле делегацияға тынныслыҡты яҡлап яһалған эшмәкәрлеге өсөн рәхмәт белдерҙе һәм *Тынныслыҡ Пактын төҙөүҙә Совет хөкүмәтенең* ҡатнашырға әҙер тороуын ышандырҙы.

ИТАЛИЯ

Тынныслыҡ Пактын төҙөү тураһындағы *Мөрәжәғәткә ҡултамғалары йыйыу буйынса кампания* Италияла әлеһән-әле уңышлы ҡолас ала бара. Һуңғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Флоренция ҡалаһында һәм Флоренция провинцияһында йыйылған *ҡултамғаларының һаны 500 меңгә* етҡән. Римда ике көн эсендә ҡултамғалары һаны 97 меңдән 105 меңгә етҡән.

Ҡултамғалары йыйыу шулай уҡ Италияның киңьяҡ өлкәләрендә лә йәйелә. Кротон ҡалаһында 15 мең граждан, Черинвола (Фоджа провинцияһы) йәшәгән 35 мең кешенең 25 меңе Мөрәжәғәткә ҡул ҡуйған.

31 май, (ТАСС).

Студенттарҙың Халҡ-ара союзының белдереүе

ПРАГА, 31 май. (ТАСС). Студенттарҙың Халҡ-ара союзы (СХС) балаларҙы яҡлауҙың Халҡ-ара көнө айҡанлы белдереү иғлан иткән.

Тынныслыҡ өсөн, яңы бөтә донъя һуғышына ҡаршы бөтә халҡтарҙың көрәшендә, тип әйтелә белдереүҙә, балаларҙы яҡлау көнө балаларҙың ғүмерен һаҡлап алып ҡалыу өсөн, уларҙың сәләмәт йәшәүгә, белем алыуға һәм бәхетле тормошҡа хоҡуҡы өсөн көрәш көнөнә әйләнде.

Бөгөн миллионлаған балалар һуғыш әҙемтәләре, эксплуатациялаһыу һәм тормоштоң сығып торғоһоҙ ауыр шарттары һөҙөмтәһендә ҡот осҡос ғазапланыуҙар кисерәләр. Миллионлаған балалар ауырыу һәм аслыҡтың ҡорбандары булып торалар, миллионлаған балалар грамотаһыҙ, ҡәкҙәпкә барыу мөмкинлегенән мәхрүм ителгән, тәрбиәләүһеҙ ҡалдырылған. Бөгөн беҙҙең уларҙы яҡлау бурысыбыҙ, ҡасан да булғанға ҡарағанда, ҙурыраҡ.

Белдереүҙә унан ары, Корейла әсәләренең имсәк һөтөн имеп ятҡан балаларҙы енәйәтсел атып үлтереү тураһында ишеткән һәр бер намыҫлы кеше быға иғтибар бирмәйенсә ҡала алмай, дөйөм тынныслыҡты яҡлау өсөн ныҡлы позиция алмайынса ҡала алмай, Корейла һәм колониаль илдәрҙә һуғышты бөтөрөүҙе талап итмәйенсә ҡала алмай, тип әйтелә.

АҠШ-та, тип билдәләнелә белдереүҙә, милитаристик белем биреү һәм әҙәбиәт ярҙамында балаларҙы «ҡот һәм рәхимһеҙ үлтереүселәр» итеп тәрбиәләйҙәр; был һуғыш тоҡандырыусыларҙың иң ҙур енәйәттәренең береһе булып тора.

Тыныс төҙөлөш илдәрендә, тип әйтелә унан ары белдереүҙә, йәш быуын бөйөләйгә икенсе шарттарҙа тәрбиәләнә, ул халҡ властеһенең даими хәстәрлеге һәм мөхәббәте менән солғап алынған, бөтә илдәрҙең халҡтары араһында тынныслыҡ һәм дуҫлыҡ рухында тәрбиәләнә.

Белдереү аҙағында, студенттарҙың Халҡ-ара союзы һәм студенттар ойошмалары башҡа халҡ-ара ойошмаларҙың балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлау тырышлыҡтарына үҙ тырышлыҡтарын бер ниндәй иҫкәрмәйенсә (?) ҡушҡанлар, тип әйтелә. Ҡорамныуҙар артынан ҡыуыуға ҡаршы көрәштә үҙ сафтарын нығытып, биш бөйөк держава араһында Тынныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тынныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡул ҡуйып һәм ҡултамғалары йыйнап, студенттар балаларҙың хоҡуҡтарын тағы ла яҡшыраҡ яҡлайҙар, бөтә йәштәр өсөн иң яҡшы киләсәкте яҡлайҙар.

Японияны милитаризациялау

Америка империалистәре Япония промышленносен Корейла һуғыш өсөн файҙаланалар

ПЕКИН, 31 май. (ТАСС). Синьхуа агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Сидней газетаһы «Трибюн», Японияла яндырыусы бомбаларҙың яңы тибы эшләнгән, уларҙы Американың ҡоралы көстәре Корейла һуғыш өсөн файҙаланалар, тип яҙа.

Союзный державалар араһында Японияла хәрби производствоны тыйыусы килешеү булыуға ҡарамаҫтан, Япония компанияһы Американың хәрби һауа көстәре өсөн бомбалар етештереүгә контракт төҙөгән.

Унан ары газета, үткән йылдың ноябрь айында уҡ Сагамигахаралағы танк заводында, «Исикавадзима дзюкогё» компанияһының танк заводында һәм «Канегафуци» компанияһының заводтарында производствоның һуғышҡа тиклемге кимәленә өлгәшелде тиерлек, тип хәбәр итә. Был заводтарҙың танкылары башлыса Американың Корейлағы ғәскәрҙәренә ебәрелгәндәр.

Американың Корейлағы ғәскәрҙәре ҡоралланыуында, тип яҙҙы газета, шулай уҡ «Мицубиси» концернының һәм «Коайо» металлургия компанияһының предприятиелары тарафынан эшләп сығарылған алыҫҡа атыусы орудиелар ҙа [illegible]. Японияның «Джапэн нитроген» химия заводы һәм «Нихон сода» компанияһының заводы шартлатыу әйберҙәре етештереү өсөн әҙерләнгәндәр.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Үләй МТС-ында хеҙмәт етештереүсәнлеге лә, сифат та түбән

Үләй МТС-ы республикала иң ҡеүәтле машина-трактор станцияларының береһе. Уның машиналар паркында унарлаған трактор, 32 сәскес, йөҙләгән башҡа ауыл хужалығы машиналары иҫәпләнә. Яҙғы сәсеүгә әҙерлектә МТС ремонт эштәрен районда беренсе булараҡ тамамлағайны. Ләкин баҫыу эштәренә башлау менән үк МТС етәкселәренең ремонт сифатына иғтибар бирмәүҙәре күренде. Яҙғы баҫыу эштәре башланып та өлгөрмәне, тиҫтәнән артыҡ трактор ватылды, уларҙы аҙналар буйына ремонтларға тура килде. Колхоздар менән төҙөшкән договор йөкләмәләре үтәлмәй. МТС директоры иптәш Әмиров «сәскес машиналары етешмәй, ягыулыҡты алыҫтан килтерәбеҙ» тип төрлө сәбәптәр таба. Ләкин был тик аҡланырға тырышыу ғына. Тракторҙар тулы ҡеүәтендә файҙаланылмай, эш темпы түбән.

МТС хеҙмәтләндергән Куйбышев исемендәге колхозда яҙғы баҫыу эштәре бик әҙәмкә һуҙылды. Был колхозда 7 трактордан торған 2 бригада эшләй. 1163 гектар майҙанда яҙғы сәсеүҙе 8, һөрөүҙе 7 эш көнөндә тамамларға йөкләмә алғайнылар. Ләкин механизаторҙарҙың был башланғысы МТС етәкселәре тарафынан яҡлау тапманы. Йөкләмәләрҙе үтәү өсөн социалистик ярыш ойошторолманы. Тракторҙарҙың береһе лә регуляр эшләмәй, трактористар смена заданиеларын үтәмәйҙәр. Эштең сифаты насар, трактористар «предплужникка һалам тығыла», тип предплужникһеҙ һабан менән һөрәләр. Быны колхоз председателе иптәш Камильянов белһә лә, трактор бригадаһы бригадирҙары Шакиров һәм Ғарифьянов иптәштәрҙән сифатлы эш талап итмәй.

Колхоздың эске мөмкинлектәре лә тулыһынса файҙаланылмай. Аттар көсө менән сәсеү һәм һөрөү ойошторолмаған. ВКП(б)-ның район комитетынан вәкил булып килгән иптәш Ихсанов колхоз правлениеһенә хеҙмәтте ойоштороу буйынса ярҙам итмәй.

Микоян исемендәге колхоз председателе иптәш Галин механизаторҙар өсөн бөтә эш һәм ял итеү шарттары тыуҙырған. Ләкин эш башлауҙың тәүге көндәрендә үк 6 трактордың 5-һе ватылып ремонтҡа туҡтатылды. МТС-тың өлкән механигы Әхияров был хәлде белә тороп та, 9 көн буйына колхозға килмәне.

Үләй МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа бындай фактар аҙ түгел. 10-лап трактор колхоздарҙа ҙур авария менән ултыра. Уларҙы МТС-тағы специалистар көсө менән төҙәтеп булмағас, ауыл хужалығы министерствоһынан махсус инженерҙар саҡырырға тура килде. Мәҫәлән, «Алға» колхозына ебәрелгән трактор бөтөнләй баҫыуға сығарылманы, ватылып тимерлек янына ҡуйылды. ДТ — 54 тракторы трактористың тәжрибәһеҙлегенән аварияға осраны, коленчатый валы һынды. Тельман исемендәге колхозда СТЗ—НАТИ тракторының блогы ярылды, картеренән май аға. Бына ошондай сәбәптәр менән яҙғы сәсеү осоронда 3307 трактор сәғәтенә простой яһалды һәм 5803 килограмм яғыулыҡ артыҡ тотолдо. 20 трактор фаралары булмау сәбәпле яҙғы баҫыу эштәре башланғандан бирле төнгө сменаларҙа эшләмәйҙәр, автомат заправкалар булдырылмаған. МТС-тың партия ойошмаһы секретары иптәш Фазылов социалистик ярыш менән етәкселек итмәй, алдынғы тәжрибәләрҙе производствоға ҡыйыу индереү һәм эске резервтарҙы файҙаланыу өсөн көрәште ойоштормай.

Районның күп кенә колхоздарында агротехниканы боҙоуға юл ҡуялар. Мәҫәлән, Булганин исемендәге колхозға район ауыл хужалығы бүлегенең агрономы иптәш Хәкимова килде. Ул, механизаторҙарҙың тунға һөрөлгән ерҙәрҙе тырматмай сәсеүҙәрен, ерҙе предплужникһеҙ һабандар менән һөрөүҙәрен күреп акт төҙөнө һәм трактор бригадаһы бригадиры Сафиндән эште яҡшы, сифатлы итеп башҡарыуҙы талап итте. Уның артынан был колхозға, Борай МТС-ы директорының политик эштәре буйынса урынбаҫары иптәш Әхәтов килде һәм агротехниканы боҙоу тураһындағы актты уҡығас, бригада члендарына:

— Икенсе тапҡыр иптәш Хәкимова килһә, уның һүҙен тыңламағыҙ. Ул бит күк һағыҙ буйынса агроном... Колхоздағы эштең сифатына хәҙергә беҙ — начальниктар яуап бирәбеҙ. Ә һеҙгә, осраған бер кешенең һүҙен тыңлап йөрөргә кем ҡушты, — тип асыуланды. Был ваҡиғанан һуң, бригадалағы бөтә трактористар ҙа һабандарынан предплужниктарҙы алып ташлап, ерҙе һөрә башланылар. Ә Киров, Микоян исемендәге, «Ҡама», «Ҡыҙыл юл» колхоздарында эшләүсе механизаторҙар, предплужниктарҙы һабандан алмай, өҫкә күтәртеп ҡуйып һөрәләр. Куйбышев исемендәге колхозда 40 гектар ашлыҡ ҡул менән сәселгән.

Район ауыл хужалығы бүлеге работниктары ла, МТС агрономдары ла колхоздарҙа баҫыу эштәренең сифаты өҫтөнән даими контроль булдырмайҙар. Сифатһыҙ үткәрелгән эштәрҙе ваҡытында төҙәтеү сараһын күрмәйҙәр.

Бына ошондай яуапһыҙлыҡтар Борай районы колхоздарында яҙғы сәсеү эштәренең планын өҙәүгә килтерҙе.

Борай районының эске мөмкинлектәре ҙур. Колхоздарҙа күп һайын йөҙәрләп аттар файҙаланылмай, эшсе ҡулдары тулыһынса эшкә бүлеп ителмәгән, механизмдар тулы ҡеүәтендә эшләмәйҙәр. Әгәр ҙә ошо кеүек мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланғанда колхоздар сәсеүҙе күптән тамамлаған булырҙар ине.

Х. Сафин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Рус драма театрында — Луначарский исемендәге баҡсала — «ТОРМОШ ӨСӨН КӨРӘШ». Башлана кис 8 сәғәт 30 минутта.

2 һәм 3 июнда **Рус драма театры бинаһында** Татар АССР-ының атҡаҙанған артистары **Ф. Йосопов** һәм **Р. Вәлиевтең** Ғ. Туҡай исемендәге татар филармонияһы солистарының ҡатнашлығында концерт буласаҡ. Башлана кис 9 сәғәттә.

«Октябрҙә»—«БУЙҺОНМАҒАН ҠАЛА».

«Салауатта» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘАРЫ».

«Уралда» — «БУЙҺОНМАҒАН ҠАЛА».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа «МӘСКӘҮҘӘН АЛЫҪТА».

«Иҙәлдә» — «КУБАНЬ КАЗАКТАРЫ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49. хеҙмәтсәнләр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П03502. Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№ 108(8825) 1951 йыл 3 июнь йәкшәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башҡорт АССР-ы Дәүләкән районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, машина-трактор станциялары һәм совхоз работниктәренең, ауыл хужалығы специалистәренең йөкләмәһе (1-се бит).

Тыныслыҡ өсөн, балалар бәхете өсөн Союздар йортоноң колонналы залында йыйылыш (1-се бит).

ПРОПАГАНДИСТӘРГӘ ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА.

Д. Фекляев. — Һуғыштан һуңғы сталинсә биш йыллыҡ осоронда совет халҡының материаль һәм культура кимәленең күтәрелеүе (2-се бит).

Бөйөк революционер һәм Совет государствоһын төҙөүсе (2-се бит).

З. Фәттәхов. — Профсоюз ойошмаларының отчет-һайлау йыйылыштары ҡарарҙарын тулыһынса үтәргә (3-сө бит).

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ.

В. Корнилов. — Ҡара-Ҡомға һөжүм итеү (3-сө бит).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. А. Бадамшин. — Коммуналь предприятиеләрҙең эшен Советтарҙың иғтибар үҙәгенә (3-сө бит).

ФЕЛЬЕТОН. — М. Алан. — Хәҙерге замандың унтер Пришибеевы Мурапи (4-се бит).

М. Мостафин. — Эшселәр клубы — культура-ағартыу эштәренең үҙәге (4-се бит).

Иран Мәжлесендә (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Социалистик ауыл хужалығында яңы уңыштарға!

Совет халҡы бөтә донъяла тыныслыҡ [illegible]

[illegible]

Ленин — Сталин партияһының һәм Совет хөкүмәтенең ғәйәт ҙур ярҙамы арҡаһында, бөйөк юлбашсыбыҙ Иосиф Виссарионович Сталиндың көндәлек хәстәрлеге [illegible] 1950 йылда [illegible] 1940 йылға ҡарағанда 345 миллион бот артыҡ булды. [illegible]

[illegible]

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының бөгөнгө номерында Дәүләкән районы колхозсыларының [illegible]

[illegible]

Ауыл хужалығы культураларының юғары [illegible]

М. И. Калинин иҫтәлеге

Мәскәүҙәге Л. М. Каганович исемендәге 1-се государство подшипниктар заводының коллективы большевиктар партияһының һәм Совет государствоһының күренекле ойоштороусыһы һәм деятеле М. И. Калинин иҫтәлеген [illegible]

Партия кабинетында һәм библиотекала [illegible] М. И. Калинин иҫтәлегенә арналған күргәҙмәләр асылды.

1 июнда күп кенә цехтарҙа һәм бүлектәрҙә М. И. Калининдың тормошо һәм революцион эшмәкәрлеге тураһында беседалар булды. (ТАСС).

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ДЕПУТАТТАРЫ ИҒТИБАРЫНА

Башҡорт АССР-ы есенсе саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы 5 июнда көндөҙ 12 сәғәттә асыласаҡ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһына килгән депутаттарҙың регистрацияһы һәм справкалар биреү көн һайын Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында иртәнге 10 сәғәттән 12 сәғәткә тиклем үткәрелә. Адрес: Пушкин урамы, 106, 2-се кат, 65-се бүлмә, телефон 2—88—82.

Башҡортостан игенселәре! Ауыл хужалығының артабан үҫеше өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ!

☆ ☆☆ ☆

Башҡорт АССР-ы Дәүләкән районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, машина-трактор станциялары һәм совхоз работниктәренең, ауыл хужалығы специалистәренең

ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Беҙ, Дәүләкән районының колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре тураһында партия һәм хөкүмәт ҡарары менән, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсә планын тормошҡа ашырыу буйынса бөтә илебеҙҙә йәйелдерелгән грандиоз эш менән рухланып һәм Украина игенселәренең данлы өлгөһөнә эйәреп, беҙ ҙә шулай уҡ ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарының яңы күтәрелеше өсөн социалистик ярышҡа ҡушылабыҙ.

Беҙ, социалистик ауыл хужалығы эшсәндәре, ауыл хужалығында төп бурысты хәл итеү өсөн — бөтә культураларҙың урожайлылығын күтәреү, общественный малдар һанын һәм продукт биреүсәнлеген арттырыу өсөн фиҙакәр көрәшәсәкбеҙ, ауыл хужалығы артелен ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыуға, совхоздар һәм МТС-тар эшендә яңы уңыштарға өлгәшәсәкбеҙ.

Беҙҙең илебеҙҙә ауыл хужалығы продукттары ни тиклем күберәк булһа, бөтә донъяла тыныслыҡ терәге — Тыуған илебеҙҙең шул тиклем көслөрәк һәм ҡеүәтлерәк буласағын беҙҙең һәр беребеҙ тәрән аңлай.

Юғары урожай алыу, общественный малдар һанын арттырыу һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү, беҙҙең үҙебеҙгә, фиҙакәр хеҙмәтебеҙгә, машина-трактор станцияларының, колхоздарҙың һәм совхоздарҙың бөтә материаль-техник һәм хеҙмәт ресурстарын файҙаланыуға тулыһынса бәйләнгән.

1951 йылда беҙ түбәндәге социалистик йөкмәләрҙе алабыҙ:

АРЫШ ҺӘМ ЯҘҒЫ БОЙҘАЙ БУЙЫНСА

Район буйынса колхоздарҙа һәм совхоздарҙа 14.177 гектар майҙандағы арыштың һәр гектарынан уртаса 100 бот һәм 37.607 гектар майҙандағы яҙғы бойҙайҙың һәр гектарынан 115 бот урожай алырға.

Ленин исемендәге ауыл хужалығы артеле — 239 гектар майҙандағы арыштың һәр гектарынан 155 бот, 2.250 гектар майҙандағы бойҙайҙың һәр гектарынан 120 бот, ә 790 гектар майҙандағы бойҙайҙың һәр гектарынан 158 бот;

Калинин исемендәге колхоз — 2.550 гектар дәйем майҙандағы арыштың һәм бойҙайҙың һәр гектарынан уртаса 120 бот, ә 67 гектар майҙандағы арыштың һәр гектарынан 180 бот һәм 468 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 150 бот;

Мәжит Ғафури исемендәге колхоз — бойҙайҙың һәм арыштың бөтә майҙанының һәр гектарынан 120 бот, ә 242 гектар арыштың һәм 480 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 150 бот;

Матросов исемендәге колхоз — арыштың бөтә майҙанының һәр гектарынан 110 бот, 1.988 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 120 бот, ә 426 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 145 бот;

Ҡаҙанғол орлоҡсолоҡ совхозы — арыш һәм бойҙайҙың бөтә майҙанының һәр гектарынан 115 бот, ә 450 гектар арыштың һәр гектарынан 141 бот һәм 200 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 132 бот;

Дәүләкән бөртөклө ашлыҡ совхозы — арыштың һәм бойҙайҙың бөтә майҙанының һәр гектарынан 115 бот, ә 772 гектар арыштың һәр гектарынан 144 бот һәм 731 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 135 бот урожай йыйнап алырға.

КӨНБАҒЫШ БУЙЫНСА

Көнбағыш сәсеүлегенең бөтә майҙанының һәр гектарынан 60-ар бот урожай алырға.

«Новая жизнь» колхозы — бөтә майҙандың һәр гектарынан 100 бот.

Калинин исемендәге, «Яңы таң» колхоздары — сәсеүлектең бөтә майҙанының һәр гектарынан 80 бот урожай алырға.

КҮП ЙЫЛЛЫҠ ҮЛӘН ОРЛОҠТАРЫ БУЙЫНСА

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың 2.450 гектар майҙандағы костер һәм люцерна сәсеүлегенең һәр гектарынан 10-ар бот күп йыллыҡ үлән орлоғо урожайын алырға.

МАЛСЫЛЫҠ БУЙЫНСА

Район буйынса, тотош алғанда, планды арттырып үтәргә — мөгөҙлө эре малдар буйынса кәмендә 200 башҡа, шул иҫәптән ишә малдар буйынса — 100 башҡа, һарыҡтар буйынса — 3 мең башҡа арттырып үтәргә.

Государство планын арттырып үтәргә һәм 1952 йылдың 1 ғинуарына ауыл хужалығы артелдәрендә 33 мең баш һарыҡ, 6 мең баш суска һәм 104 мең ҡош булдырырға.

Ошо йылдың 15 октябренә тиклем малдар өсөн яңы торлаҡтар төҙөүҙе тамамларға. Бөтә мал торлаҡтарын ремонтлауҙы 15 сентябргә тамамларға.

1400 баш мөгөҙлө эре малды, 4300 баш һарыҡты, 1440 баш сусҡаны көтөүҙә йөрөгән һимертеүҙе ойошторорға. Государствоға тик һимеҙ һәм ярым һимеҙ сусҡаларҙы ғына, ә башҡа малдарҙы тик уртаса кимәлдән юғары булғандарын ғына тапшырырға. Фуражлағы һәр бер һауын һыйырҙан уртаса 1900 литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 3,6 килограмм йөн ҡырҡып алырға, һәр бер тауыҡтан 70 йомортҡа алырға.

Молотов исемендәге колхоздың һыйыр һауыусылары Кондратец һәм Яковлева иптәштәр — фуражлағы һәр бер һыйырҙан 2300-әр литр, Дәүләкән бөртөклө ашлыҡ совхозы — 2500-әр литр, Ҡаҙанғол орлоҡсолоҡ совхозы — 2800-әр литр һөт һауып алырға. Был совхоздарҙың һыйыр һауыусылары иптәш Андреева — 3500-әр литр, Яковлева — 3000-әр литр һөт һауып алырға.

Колхоздар буйынса тамыр аҙыҡтарының, йәшелсә һәм ҡарбуз-ҡауын культураларының һәр гектарынан уртаса 160 центнер һәм силос культураларынан — 150 центнер урожай алырға һәм 18.500 гектар майҙандағы күп йыллыҡ үләндәрҙең һәр гектарынан 30-ар центнер бесән сабып алырға.

Киров исемендәге, «Ҡорытмаҫ» колхоздары һәр гектарҙан 200 центнер, Сталин исемендәге колхоз — 400 центнер тамыр аҙығы урожайы алырға.

БАСЫУ ҺАҠЛАУСЫ УРМАН ПОЛОСАЛАРЫ УЛТЫРТЫУ БУЙЫНСА

Колхоздарҙа 600 гектар майҙанда урман полосалары ултыртыу эшен үтәргә һәм 750 гектар майҙанда былтыр ултыртылған урман полосаларын ремонтлауҙы үткәрергә. Урман полосаларын үҙ ваҡытында тәрбиәләүҙе тәьмин итергә. Ултыртылған ағастарҙың бөтәһенең дә яҡшы үҫеүенә өлгәшергә һәм 1952 йылғы пландың үтәү өсөн етерлек һанда ағас һәм ҡыуаҡтар орлоҡтарын әҙерләргә.

МАШИНА-ТРАКТОР СТАНЦИЯЛАРЫ БУЙЫНСА

Ужым культураларының урожайлылығын артабан күтәреүҙе тәьмин итеү маҡсатында, пар ерҙәрен йәй буйына таҙа, йомшаҡ хәлдә тотоу өсөн, уларҙы үҙ ваҡытында эшкәртәсәкбеҙ һәм ентекле тәрбиәләйәсәкбеҙ. Урожайҙы үҙ ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйнау менән бергә ҡамыл топтарын йомшартыуҙы үткәрергә. Көҙгө ашлыҡтарҙы сәсеүҙе иң яҡшы агротехник сроктарҙа үткәрәсәкбеҙ. 1952 йылдың яҙы сәсеүе өсөн бөтә майҙанды тунға һөрөүҙе 1951 йылдың 10 октябренә тиклем тамамлаясаҡбыҙ. 44.600 гектар майҙанда комбайндар менән урожай йыйнау планын тулыһынса һәм арттырып үтәйәсәкбеҙ һәм һәр бер тракторсыҙың, комбайнерҙың, машинистың план заданиеләрен һәм эшләп сығарыуҙың смена нормаларын үтәүенә өлгәшәсәкбеҙ. Һәр бер 15 футлы комбайн менән 350 гектар майҙандың урожайын йыйнап аласаҡбыҙ. Дәүләкән күргәҙмә-тәжрибә МТС-ының комбайнерҙәре иптәш Блохин С—6 комбайнында 700 гектар, иптәш Платонов — 700 гектар, иптәш Әхмәров — 650 гектар майҙандың урожайын йыйнаясаҡ.

Суйынсы МТС-ының комбайнерҙәре иптәш Саломатин тағылмалы ике С—6 комбайны менән 1000 гектар, иптәш Арсланғазин тағылмалы ике С—6 комбайны менән 900 гектарҙың урожайын йыйнаясаҡ.

Аслыкүл МТС-ының комбайнерҙәре иптәш Рублев тағылмалы ике С—6 комбайны менән 1200 гектар, иптәш Нагорный С—4 комбайнында 400 гектар, иптәш Фазылов «Коммунар» комбайнында 500 гектар майҙандың урожайын йыйнаясаҡ. Тракторсылар иптәш Кузмичев НАТИ тракторында, йомшаҡ һөрөүгә күсергәндә, 800 гектар, иптәш Ҡарабай СХТЗ тракторында 600 гектар, Зенкин һәм Самсонов иптәштәр С—80 тракторында 3500 гектар ер эшкәртәсәктәр.

ГОСУДАРСТВО АЛДЫНДАҒЫ ЙӨКЛӘМӘЛӘРҘЕ ҮТӘҮ

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың ит, һөт һәм йомортҡа тапшырыу буйынса государство пландарын 1951 йылдың 1 октябренә үтәргә.

Йөн тапшырыу планының 75 процентен 20 июнгә үтәргә һәм йыллыҡ заданиене 5 октябргә тамамларға.

Иген әҙерләүҙе һәм МТС-тар эше өсөн натураләтә түләүҙең государство планын 1 октябргә үтәргә.

Беҙ, колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре үҙебеҙгә ошо йөкләмәләрҙе алып, уларҙы намыҫ менән үтәргә, бөйөк Тыуған илебеҙҙә коммунизм төҙөүгә фиҙакәр хеҙмәтебеҙ менән булышлыҡ итергә һүҙ бирәбеҙ.

Башҡортостандың бөтә игенселәрен, малсылыҡ работниктәрен, механизаторҙарын һәм ауыл хужалығы специалистәрен беҙҙең өлгөбеҙгә эйәрергә һәм республикабыҙҙың социалистик ауыл хужалығын артабан күтәреү өсөн социалистик ярыш йәйелдерергә саҡырабыҙ.

Йәшәһен беҙҙең юлбашсыбыҙ, уҡытелебеҙ һәм колхоз крәҫтиәндәренең дуҫы Иосиф Виссарионович Сталин!

Йөкләмә Дәүләкән районы колхозсыларының, совхоз һәм МТС эшселәренең дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Тыныслыҡ өсөн, балалар бәхете өсөн!

Союздар йортоноң колонналы залында йыйылыш

Прогрессив кешелек 1 июнда балаларҙы яҡлауҙың Халыҡ-ара көнөн икенсе тапҡыр билдәләне.

Мәскәү ҡалаһы ҡатын-ҡыҙҙары активының, мәғариф работниктәренең һәм пионер работниктәренең балаларҙы яҡлауҙың Халыҡ-ара көнөнә арналған йыйылышы тыныслыҡ, балаларҙың бәхете өсөн көрәштә совет халҡының берҙәмлеген асыҡ демонстрациялау булды. Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең балалары тураһында атайҙарса хәстәрлек күргән өсөн йыйналыусылар большевиктар партияһына, Совет хөкүмәтенә, иптәш И. В. Сталинға ҡайнар рәхмәт белдерҙеләр.

Йыйылышта ҡатнашыусылар ВКП(б) Үҙәк Комитетының иптәш И. В. Сталин етәкселегендәге Политбюроһын ҙур рух күтәренкелеге менән Почетлы президиумға һайланылар.

Балаларҙы яҡлауҙың Халыҡ-ара көнө тураһындағы докладта совет ҡатын-ҡыҙҙарының Антифашистик комитеты председателенең урынбаҫары иптәш Н. М. Парфенова тыныслыҡтың үҫә барған көстәре тураһында, Советтар Союзы һәм халыҡ демократияһы илдәре балаларының бәхете тураһында, капиталистик һәм колониаль илдәрҙә балаларҙың ауыр тормошо тураһында һөйләне.

Фашистар тарафынан ҡоллоҡҡа ҡыуылған совет балаларын хәҙерге көнгә тиклем ҡайтармай тотоусы Көнбайыш Германиялағы Англия-Америка оккупацион властарының адресына йүнәлтелгән докладсы һүҙҙәрен йыйылышта ҡатнашыусылар айырыуса тулҡынланып ҡаршыланылар.

Балаларҙы яҡлауҙың Халыҡ-ара көнөндә, — тип белдерҙе иптәш Парфенова,— совет кешеләренең асыулы тауышын бөтә донъя ишетһен. Беҙҙең балаларыбыҙҙы ҡайтарығыҙ, — тип талап итәбеҙ беҙ, совет әсәләре, — уларҙың Тыуған иле бар!

Икенсе донъяла — капитализм донъяһында миллионлаған балалар үлсәп бөткөһөҙ ғазапланыуҙарға һәм мәхрүмлектәргә, рәхимһеҙ эксплуатацияға дусар ителәләр. Балаларҙың күп үлеүе, тотош халыҡтарҙың бөтөүенә янай.

— Ҡеүәтле Советтар Союзы һәм бөтә кешелектең бәхете өсөн бөйөк көрәшсе Иосиф Виссарионович Сталин, — тине иптәш Парфенова, — тыныслыҡ өсөн, балаларҙың яҡты киләсәге өсөн миллионлаған ябай кешеләр көрәшенең байрағы булып тора.

Дзержинский исемендәге «Трехгорная мануфактура» комбинатының туҡыусыһы З. П. Меньшикова, Мәскәү ҡалаһының 330-сы номерлы урта мәктәбе директоры А. Т. Мостовой, СССР медицина фәндәре Академияһының член-корреспонденты Ю. Ф. Домбровская, ВЛКСМ-дың Мәскәү комитеты секретары Л. К. Жукова, СССР совет яҙыусылары Союзы генеральный секретаренең урынбаҫары А. А. Сурков йыйылышта телмәрҙәр менән сығыш яһанылар.

Йыйылышта ҡатнашыусылар ҙур рух күтәренкелеге менән иптәш И. В. Сталинға хатты ҡабул иттеләр. (ТАСС).

„Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн" халыҡ-ара Сталин премиялары буйынса комитетта

Мексиканың общественный деятеле Эриберто Хараға халыҡ-ара Сталин премияһын биреү

1 июнда Кремлдә, Свердлов залында Мексиканың элекке министры, общественный деятель, тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу һәм нығытыу эше өсөн актив көрәшсе Эриберто Хараға «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара Сталин премияһын биреү булып үтте.

Көндөҙгө 2 сәғәттә залда совет общественный ойошмаларының — тыныслыҡты яҡлауҙың Совет комитетының, совет ҡатын-ҡыҙҙарының Антифашистик комитетының, совет йәштәренең Антифашистик комитетының, профсоюздарҙың күп һанлы вәкилдәре йыйналды. Ҡатнашыусылар араһында илебеҙҙең күренекле ғалимдәре, яҙыусылар, совет искусствоһы деятелдәре, Мәскәү предприятиеләренең стахановсылары бар.

Эриберто Хараны, халыҡ-ара Сталин премиялары буйынса Комитет председателе академик Д. В. Скобельцынды, Комитет членары А. А. Фадеевты һәм И. Г. Эренбургты, тыныслыҡты яҡлауҙың Совет комитеты председателе Н. С. Тихоновты залда күренеүе ҡатнашыусылар тарафынан йылы ҡаршыланы.

Халыҡ-ара Сталин премиялары буйынса Комитет ҡарарын иғлан иткәндән һуң Комитет председателе академик Скобельцын Эриберто Хараға халыҡ-ара Сталин премияһы лауреатының дипломын һәм күкрәккә ҡаҙап йөрөтә торған алтын медаль тапшыра. Рус һәм испан телдәрендә яҙылған диплома, тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу һәм нығытыу өсөн көрәш эшендә күренекле хеҙмәттәр өсөн Эриберто Хараға «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара Сталин премияһы бирелде, тип әйтелә. Халыҡ-ара Сталин премияһы лауреаты алтын медаленең уң яғында — тыныслыҡтың бөйөк байраҡсыһы И. В. Сталиндың барельефы.

Эриберто Хараны юғары награда менән ҡотлап, академик Скобельцын былай тине: «Совет Социалистик Республикалар Союзының башҡалаһы — Мәскәүҙә Һеҙгә халыҡ-ара Сталин премияһын биреү бөтә кешеләрҙең дә, уларҙың политик ҡараштарына һәм ниндәй милләттән булыуҙарына ҡарамаҫтан, дөйөм тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыуға һәм халыҡтар араһында ысын дуҫлыҡты урынлаштырыуға йүнәлтелгән тырышлыҡтарын совет халҡының юғары баһалауын һәм ҡайнар яҡлауын бөтә донъяға тағы ла бер тапҡыр күрһәтеүсе күренекле ваҡиға булып тора.

Тыныслыҡ өсөн, империалистик агрессияға ҡаршы ҡаҡшамаҫ һәм эҙмә-эҙлекле көрәшеүсе булараҡ, Һеҙҙең исемегеҙ бөтә илдәрҙәге тыныслыҡ һөйөүсе кешеләргә, шулай уҡ совет халҡына ла яҡшы билдәле. Төрлө илдәрҙең демократик көстәренең вәкилдәрен үҙ эсенә индергән халыҡ-ара Сталин премиялары буйынса Комитет Һеҙгә премия биреп, тыныслыҡты яҡлаусылар хәрәкәте сафтарында көрәшеүсе бөтә намыҫлы һәм тыныслыҡты һөйөүсе кешеләрҙең дөйөм фекерен белдереүен аңланы».

Тыныслыҡты яҡлауҙың Совет комитеты председателе Н. С. Тихоновтың, совет яҙыусылары Союзы генеральный секретарының урынбаҫары А. А. Сурковтың һәм совет ҡатын-ҡыҙҙарының Антифашистик комитеты председателенең урынбаҫары З. Н. Гагаринаның лауреатты ҡайнар ҡотлап һөйләгән телмәрҙәренән һуң ҡатнашыусылар тарафынан йылы ҡаршыланған, халыҡ-ара Сталин премияһы лауреаты Эриберто Хара яуап телмәре менән сығыш яһаны. (ТАСС).

Нефть предприятиеләрендә коллектив стахановсы хеҙмәт өсөн

Илебеҙҙең нефтселәре хеҙмәтте ойоштороуҙың алдынғы методтарын предприятиеләргә киң индерәләр, отличная сифатлы айырым цехтарҙан һәм бригадаларҙан коллектив стахановсы хеҙмәт предприятиеләренә күсеү өсөн көрәшәләр.

Беренсе уңыштарға өлгәшелде лә инде. Нефть промышленносе министерствоһының хеҙмәт ойоштороу управлениеһенең начальнигы иптәш М. Т. Лосевтең ТАСС хәбәрсеһенә хәбәр итеүенә ҡарағанда, «Октябрьнефть» тресының икенсе промыслаһында («Грознефть» берекмәһе) һәм «Ставропольнефть» тресының беренсе промыслаһында («Куйбышевнефть» берекмәһе) нормаларҙы бөтә бригадалар ҙа арттырып үтәйҙәр.

Нефть промышленносе министерствоһы һәм профсоюз Үҙәк Комитеты эшселәрҙең, инженерҙарҙың, техниктарҙың һәм хеҙмәткәрҙәрҙең патриотик инициативаһын хупланы һәм коллектив стахановсы хеҙмәт предприятиеһы исемен алыу өсөн социалистик ярыш шарттарын раҫланы.

ПРОПАГАНДИСТАРҒА ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ осоронда совет халҡының материаль һәм культура кимәленең күтәрелеүе

Ленин—Сталин партияһы һәм Совет хөкүмәте халыҡ тормошоноң материаль һәм культура кимәлен туҡтауһыҙ күтәреү политикаһын тормошҡа ашыра.

Иптәш Сталин былай тип әйтте: «Социализм общественность етештереү көстәренең ғәҙәттән тыш үҫеүе базаһында тыуа, продукттарҙың һәм тауарҙарҙың мулдығы базаһында тыуа, хеҙмәтсәндәрҙең иркен тормошо базаһында тыуа, культураның ныҡ күтәрелеүе базаһында тыуа» («Ленинизм мәсьәләләре», 473-сө бит).

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта халыҡ хужалығының тиҙләнеп күтәрелеүе нигеҙендә СССР хеҙмәтсәндәренең тормошоноң материаль һәм культура кимәлен күтәреүҙә ҙур уңыштарға өлгәшелде. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планын үтәүҙең йомғаҡтары туралында СССР Государство План Комитеты һәм СССР Үҙәк Статистика Идаралығының белдереүендә Совет Союзы халыҡтарының бөтә донъя әһәмиәтле тарихи еңеүҙәре йомғаҡлана. Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ план халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында ла арттырып үтәлде.

* * *

Совет халҡы тормошоноң материаль һәм культура кимәленең күтәрелеүе халыҡ хужалығының туҡтауһыҙ үҫеүенә нигеҙләнә.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда СССР халыҡ хужалығы ҙур уңыштарға өлгәште. 1950 йылда СССР-ҙың милли доходы 1940 йылдағы менән сағыштырғанда 64 процентҡа артты.

Совет халҡының материаль һәм культура кимәленең күтәрелеүе милли доходтың үҫеүе менән бәйле.

СССР-ҙың милли доходы капиталистик илдәрҙәге кеүек түгел, туҡтауһыҙ үҫә. 1940 йылда СССР-ҙың милли доходы, 1913 йылға сағыштырғанда, 6 тапҡырға артты.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда СССР-ҙың милли доходы тағы ла артты. Биш йыллыҡ планда милли доходты 1940 йылға ҡарағанда 38 процентҡа арттырыу ҡаралғайны. Ысынында 1950 йылда, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 64 процентҡа артты.

СССР-ҙа милли доходты бүлеү принцибы капиталистик илдәрҙәге принциптан тамырынан айырылып тора. Капиталистик илдәрҙә милли доходтың күберәк өлөшөн капиталистар үҙләштерә, ә эшселәр һәм крәҫтиәндәр хеҙмәт халҡы бик аҙ өлөш ала.

СССР-ҙа милли доходты бүлеү эксплуататор синыфтарҙың булмауы менән билдәләнә. СССР-ҙа милли доходтың бөтәһе лә хеҙмәтсәндәр файҙаһына тота.

Социализмдың еңеүе һөҙөмтәһендә СССР-ҙа милли доходтың барыһы ла хеҙмәтсәндәр ҡарамағында ҡала. Уның бер өлөшө шәхси ҡулланыуға китә, ә ҡалғаны халыҡ хужалығын киңәйтеүгә, һәм культура һәм хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреүгә тотола.

«...Бөтә милли доходтың 75 проценты хеҙмәтсәндәрҙең материаль һәм культура ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә китә...»

Хеҙмәтсәндәрҙең индивидуаль ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә, шулай уҡ колхозсыларҙың доходтары артты.

Халыҡ хужалығының үҫеүе һөҙөмтәһендә хеҙмәтсәндәрҙең реаль доходтары артты. 1950 йылда эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль доходтары 1940 йылдағы кимәлдән байтаҡҡа артты.

Капиталистик илдәрҙә, киреһенсә, хеҙмәт халҡының хәле насарая.

Совет хөкүмәте һәр йыл һайын тауарҙарға хаҡтарҙы төшөрә. 1947—1950 йылдарҙа хаҡтар дүрт тапҡыр төшөрөлдө.

Үткән биш йыллыҡта социалистик промышленность халыҡ ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе байтаҡҡа арттырҙы.

Был хеҙмәтсәндәрҙең тормошон яҡшыртыуға булышлыҡ итте.

* * *

Үткән биш йыллыҡта совет халҡы ауыр промышленностың тиҙләнеп үҫеүе нигеҙендә ауыл хужалығын һәм еңел промышленносты үҫтерҙе, халыҡ ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе киңәйтте.

Ауыр промышленностың үҫеүе ауыл хужалығын һәм еңел промышленносты үҫтереүгә ярҙам итте.

Совет хөкүмәте 1947 йылда аҡса реформаһын тормошҡа ашырҙы, сауҙала карточка системаһын бөтөрҙө һәм совет һәм колхоз-кооператив сауҙаһын байтаҡ киңәйтте. Тауар әйләнеше 1950 йылда 1940 йылдағы кимәлдән байтаҡҡа уҙҙы.

Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте һәм шәхсән иптәш Сталин халыҡтың тормош кимәлен күтәреү өсөн даими хәстәрлек күрә.

СССР хеҙмәтсәндәре государство иҫәбенә льготалар, пособиелар, социаль страхование, санаторийҙарҙа һәм ял йорттарында бушлай ял итеү һәм башҡа юлдар менән ярҙам алалар. 1950 йылда был сығымдар 120 миллиард һумдан ашыу тәшкил итте.

* * *

Социалистик революция һөҙөмтәһендә Советтар Союзы халыҡтары культура өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Эксплуататорҙарҙы бөтөрөү, милли изеүҙе бөтөрөү СССР халыҡтарының формаһы буйынса милли, йөкмәткеһе буйынса социалистик культураһын үҫтереүгә юл асты.

Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте һәм шәхсән иптәш Сталин СССР халыҡтарының культураһын үҫтереү өсөн даими хәстәрлек күрә.

СССР-ҙа культура революцияһы ҡайһы бер илдәрҙә бер нисә быуат дауам иткән эште ҡыҫҡа ваҡыт эсендә башҡарҙы.

Һуғыш йылдарында ВКП(б) Үҙәк Комитеты фән, культура һәм сәнғәт өлкәһендә бер нисә ҡарар ҡабул итте.

Капиталистик илдәрҙә фән, культура һәм сәнғәт реакция хеҙмәтенә ҡуйылған.

СССР-ҙа халыҡ мәғарифы киң үҫеш алды. 1950 йылда башланғыс, ете йыллыҡ, урта мәктәптәрҙә, техникумдарҙа һәм юғары уҡыу йорттарында 37 миллион кеше уҡыны. Был 1940 йылдағынан байтаҡҡа күберәк.

СССР-ҙа уҡыусыларҙың һаны, юғары уҡыу йорттарының селтәре үҫте.

1950 йылда башланғыс, ете йыллыҡ, урта мәктәптәрҙә һәм техникумдарҙа 37 миллион кеше уҡыны. Был 1940 йылдағы менән сағыштырғанда байтаҡҡа күберәк. 1950 йылда юғары уҡыу йорттарында 1 миллион 247 мең студент уҡыны.

Үткән биш йыллыҡта СССР-ҙа фәнни-тикшеренеү институттарының селтәре үҫте. Советтар Союзының ғалимдары Ватан фәне һәм техникаһы алдында торған бурыстарҙы уңышлы хәл итәләр.

6,5 мең кешегә Сталин премияһы лауреаты исеме бирелде.

Халыҡ интеллигенцияһы хеҙмәт иткән социалистик йәмғиәткә ярҙам итә. Ул хеҙмәтсәндәрҙең коммунистик тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай.

Үткән биш йыллыҡта культура-ағартыу учреждениеларының селтәре киңәйҙе. 1950 йылда китапханаларҙа китаптар һаны, клубтар һаны артты. Кинотеатрҙар, кино-установкалар һаны 1,5 тапҡырға артты.

Царизм һәм хөкүмәтебеҙ хеҙмәтсәндәренең һаулығы тураһында хәстәрлек күрә. Беҙҙең илебеҙҙә больницалар, амбулаториялар, консультациялар һәм фельдшер пункттарының селтәре киңәйә.

1950 йылда больницаларҙа койкалар һаны 1940 йылға ҡарағанда 25 процентҡа үҫте. Врачтар һаны 75 процентҡа артты. Балалар баҡсаларында һәм яслеларҙа балалар һаны артты.

Һуғыш йылдарында немец-фашист баҫҡынсылары илебеҙгә ҙур зыян килтерҙеләр. Улар 1710 ҡаланы һәм 70 меңдән артыҡ ауылды тулыһынса йәки өлөшләтә емерҙеләр. Миллиондарса кеше торлаҡһыҙ ҡалды.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа ҙур торлаҡ төҙөлөшө алып барылды. 100 миллион квадрат метрҙан артыҡ торлаҡ майҙаны эксплуатацияға бирелде. Ауыл ерҙәрендә 2,7 миллион торлаҡ йорто төҙөлдө.

* * *

Культура күтәрелешенең асыҡ миҫалы булып Башҡорт АССР-ы тора. 1911 йылда хәҙерге Өфө губернаһында 1368 мәктәп булып, унда тик 82,9 мең генә бала уҡыған. Уларҙың араһында башҡорт балалары бик аҙ ине. 1897 йылда грамоталы кешеләр тик 22,2 процент тәшкил иткән, ә башҡорт халҡы араһында уҡый-яҙа белеүсе бик аҙ ине.

Большевиктар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең етәкселегендә Совет власы йылдарында Башҡортостанда ысын культура революцияһы булып үтте. Башҡорт культураһы формаһы буйынса милли, йөкмәткеһе буйынса социалистик культура булып үҫте. Был йылдарҙа Башҡортостанда грамотаһыҙлыҡ бөтөрөлдө.

1950 йылда республика территорияһында 600 мең бала уҡыны.

Башҡортостанда революцияға тиклем юғары уҡыу йорттары бөтөнләй булмаған. Хәҙер республикала 7 юғары уҡыу йорто, 49 техникум һәм 22 махсус урта уҡыу йорто эшләй.

Культура-ағартыу учреждениелары: театрҙар, клубтар, китапханалар һәм башҡалар үҫте. Революцияға тиклем Башҡортостанда 7 китапхана булған. 1950 йылда республикала китапханалар һаны 300-ҙән артты. 1600 клуб һәм 350 государство ауыл клубтары эшләй.

Өлкә театрҙар бөтөнләй юҡ ине. Хәҙер Өфөлә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, драма театры, рус драма театры, ҡурсаҡ театры һәм башҡа театрҙар бар. Республиканың бик күп ҡала һәм районында театрҙар эшләй.

Революцияға тиклем Башҡортостанда китаптар, газеталар бик аҙ сығарыла ине. Хәҙер Башҡортостанда 96 район газетаһы, 14 ҡала газетаһы, ос журнал сыға.

Башҡорт государство нәшриәте был йылдарҙа 8 миллион нөсхәлә китап баҫып сығарҙы. Уларҙан 3,5 миллион данаһы башҡорт телендә сыҡты.

Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте үҫте.

Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә совет халҡы илебеҙҙә коммунизм төҙөү өсөн көрәшә һәм тормошоноң материаль һәм культура кимәлен туҡтауһыҙ күтәрә.

Д. Фомина,
ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты лекторы.

БӨЙӨК РЕВОЛЮЦИОНЕР ҺӘМ СОВЕТ ГОСУДАРСТВОҺЫН ТӨҘӨҮСЕ

(М. И. Калининдең үлеүенә биш йыл тулыуға ҡарата)

Бынан биш йыл элек, 1946 йылдың 3 июнендә, данлы революционер, тоғро ленинсе, коммунизм өсөн арымай-талмай һәм ялҡынлы көрәшсе — Михаил Иванович Калинин үлде.

Бөйөк эпохалар бөйөк кешеләрҙе күтәрә. Тап бына шундай бөйөк кеше, бөтмәҫ-төкәнмәҫ революцион энергиялы, халыҡ бәхете өсөн көрәштә ҡурҡыуҙы белмәүсе кеше М. И. Калинин булды.

Уның ҡайнап торған бөтә тормошо һәм уңышлы эшмәкәрлеге — халыҡҡа фиҙаҡәр хеҙмәт итеүҙең һәм Тыуған илгә тәрән бирелгәнлектең рухландырыусы өлгөһө ул. Михаил Ивановичтең исеме — беҙҙең партиябыҙҙың героик тарихынан айырылғыһыҙ. «Минең тормошомдоң бөтә тарихе, — тине ул, — асылда, эшселәр синыфының бөтә тарихы ла шунан тора: беҙ Ленин — Сталин етәкселегендә эшләнек һәм көрәштек».

Ленин менән Сталиндең иң яҡын дуҫы һәм соратнигы булған М. И. Калинин подполщик-революционерҙың ауыр мәктәбен үтте. Батша шымсылары тарафынан ҡыуылған һәм эҙәрләнгән хәлдә, ул 14 тапҡыр ҡулға алына, бер нисә тапҡыр төрмәлә ултыра, һөргөнгә ебәрелә. Ләкин был бөйөк революционерҙы тағы ла ныҡыраҡ сыныҡтырҙы, ҡоллоҡ, эксплуатация, хәүефселек һәм ҡараңғылыҡ короллоғона ҡаршы көрәш уның өсөн тормош көрәшселеге булып әүерелде.

Ленин һәм Сталин менән бергә Михаил Иванович Калинин ленинизм дошмандарына ҡаршы ауыр көрәштә беҙҙең партиябыҙҙы төҙөнө. Ул ленинсе-сталинсе «Правда»ны ойоштороуҙа туранан-тура ҡатнашты, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһын әҙерләү һәм ғәмәлгә ашырыуҙа актив ҡатнашты. Михаил Ивановичтең күп йыллыҡ, ауырлыҡтар һәм хәүефтәр менән тулы булған революцион эшмәкәрлеге уны бай тормош тәжрибәһе менән байыҡтырҙы һәм уны большевиктәр партияһының һәм Совет государствоһының күренекле етәкселәренән береһе итте.

1919 йылда, партияның VIII съезында М. И. Калинин партия Үҙәк Комитетының члены итеп һайланды. Шул ваҡыттан алып ул өҙлөкһөҙ рәүештә Үҙәк Комитет члены, ә 1926 йылдан — ВКП(б) Үҙәк Комитетының Политбюро члены булып килде.

ВЦИК-тың беренсе председателе Я. М. Свердлов үлгәндән һуң 1919 йылдың башында Владимир Ильич Лениндең тәҡдиме буйынса М. И. Калинин совет республикаһының башлығы итеп ҡуйылды. Уны юғары государство пөсыина күрһәтеп, Ленин былай тине: «шулай эшләргә кәрәк: Совет власеның башына урта хәлле крәҫтиәнгә мөнәсәбәт тураһында беҙҙең ҡарарыбыҙ ысындан да ғәмәлгә ашырыласаҡ икәнлекте күрһәтерлек иптәш ҡуйылһын... Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙә тормош тәжрибәһен һәм урта хәлле крәҫтиән тормошо менән танышлығын бергә ҡушыусы иптәште таба алһаҡ был бурысты хәл итәсәгебеҙҙе беҙ беләбеҙ һәм мин, уның тураһында бөгөн беҙ газетала уҡыған кандидатура бөтә был шарттарҙы ҡәнәғәтләндерә, тип уйлайым. Был — иптәш Калининдең кандидатураһы».

Михаил Иванович Калинин Ленин үлгәндән һуң партияның иптәш Сталин етәкселегендә барлыҡҡа килгән өлкән ядроһы сафында ине. Сталин етәкселегендә ҡыйыу һәм аяуһыҙ көрәштә партиябыҙ ленинизм дошмандарын, халыҡ дошмандарын — троцкийсыларҙы, зиновьевсыларҙы, бухаринсыларҙы һәм Тыуған илдең башҡа ерәнгес хыянатсыларын тар-мар итте. Лениндең бөйөк байрағын һаҡлап алып ҡалды, Ленин байрағы тирәһенә тағы ла тығыҙыраҡ туплады һәм совет халҡын коммунизм төҙөүҙең киң юлына алып сыҡты. Был көрәштә М. И. Калинин тайпылышһыҙ рәүештә Ленин эшен дауам итеүсе — иптәш Сталин артынан барҙы. Ул былай тине: «Мин, иптәштәр, коммунизм өсөн уңышлы көрәшеү — был Сталин артынан барыу, тигән һүҙ, тип уйлайым».

Аҡыллы һәм һиҙгер государство эшмәкәре, ысын халыҡ трибуны булған М. И. Калинин үҙенең сығыштарында, беседаларында, мәҡәләләрендә беҙҙең илебеҙҙә социалистик төҙөлөш перспективаларын марксистик-ленинсе теорияның асыҡ яҡтылығы менән нурландырҙы, совет кешеләрен коммунизмдең еңеүе хаҡына фиҙаҡәр хеҙмәткә рухландырҙы. «Беҙ, — тине ул, — социализмдың беренсе төҙөүселәр булып торабыҙ. Тарих беҙгә шундай хөрмәт күрһәтте... уйлап ҡына ҡарағыҙ — был нимә тигән һүҙ! Меңәр йылдар үтер, кешелек донъяһы социализмдең тарихен өйрәнер, был ваҡытта улар шундай ябай кешеләрҙең социализмде беренсе төҙөүселәр булыуына һоҡланырҙар һәм ғәжәпләнерҙәр. Был — бөйөк почет... Бөтә кешелек донъяһы интерестарында эшләгән бөйөк тарихи подвигебеҙ өсөн беҙҙе ҡасан да булһа цәкә аласаҡтары тураһындағы фекерҙең, был фекерҙең беҙҙе хәҙер рухландырмауы һәм дәртләндермәүе мөмкин түгел...».

М. И. Калинин 27 йыл буйына алыштырылмайынса Совет социалистик государствоһының Верховный органының башында, беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөүҙең ҡеүәтле ҡоралы, иҙеүгә һәм эксплуатацияға ҡаршы көрәштә бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең таянысы, уларға азатлыҡ юлын күрһәтеүсе маяҡ булған органдың, башында торҙо. Был юғары поста ул бөтә туғандаш совет халыҡтарының дәйем һөйөүен ҡаҙанды. М. И. Калинин, ленинсе-сталинсе милли политиканы ғәмәлгә ашыра барып, совет халыҡтарының дуҫлығын һәм берҙәмлеген арымай-талмай нығытты.

Ялҡынлы патриот, бөйөк рус халҡының бөйөк улы М. И. Калинин меңәрләгән нығыҙ ептәр аша хеҙмәтсәндәрҙең киң массалары менән бәйләнгәйне. Ул даими рәүештә эшселәр, крәҫтиәндәр, совет интеллигенцияһы менән осрашты. Уның ялҡынлы телмәрҙәре съездарҙа һәм конференцияларҙа, эшселәр һәм мәктәп уҡыусыларының, интеллигенцияның һәм колхозсыларҙың йыйылыштарында яңғыраны. Ул үҙенең сығыштарында массаны өйрәтеп кенә ҡалманы, бәлки шуның менән бергә бөтә ғүмере буйына халыҡтан өйрәнде, уның тәжрибәһен һәм аҡылын үҙенә алды. Ул түбәндәге гүзәл һүҙҙәрҙе әйтте: «совет халҡын һөйөүҙән, коммунизм өсөн уның менән бергә көрәшеүҙән дә яҡшыраҡ һәм юғарыраҡ цәмәнең политик деятелдең тормошонда булыуы мөмкинме!».

Үҙ Тыуған иленең данлы киләсәгенә ныҡлы ышаныу М. И. Калининга еңелмәҫлек көстәр бирҙе, был көстәрҙе ул аҙағына тиклем социалистик государствоны нығытыу эшенә һалды. «...Әгәр ҙә ысындан да коммунизм төҙөргә теләһәгеҙ,—тине ул,—ул ваҡытта социалистик государствоны бөтә яҡлап нығытығыҙ». М. И. Калинин был бөйөк бурысты ғәмәлгә ашырыу өсөн государство власе органдарын идара итеүгә хеҙмәтсәндәрҙең миллионлаған массаларын актив ҡатнашыуға йәлеп итергә кәрәк, тип иҫәпләне.

М. И. Калинин социализм илеңең бөйөк халыҡ-ара әһәмиәтен һәр ваҡыт һыҙыҡ өҫтөнә алып килде. Ул былай тип яҙҙы: «Әгәр ҙә һеҙ хәҙер Көнбайыш Европаның йәки Американың намыҫлы пролетарийенән уның киләсәккә инсек ҡарауын, кәләһе көнгә уның ниндәй перспективаларҙы күҙ алдына тотоуын һораһағыҙ, ул, иптәштәр, һеҙгә былай тип әйтер: «Пролетарий өсөн донъяла иң мөһим перспектива — Советтар Союзын нығытыу һәм үҫтереү ул».

М. И. Калининдең коммунистик тәрбиәләүгә арналған күрһәтмәләренең, кәңәштәренең һәм сығыштарының баһалап бөтөргөһөҙ әһәмиәте бар. Бөтә хеҙмәтсәндәрҙе яңы общественың актив һәм аңлы төҙөүселәр итеү өсөн, тип әйрәтте ул, уларға иҫке ғәҙәттәр йәғенән, капитализм ҡалдыҡтарынан ҡотолоуға ярҙам итергә, уларҙың аңына коммунизм идеялары һеңдерергә, уларҙы кешелек тарихында иң алдынғы булған социалистик мораль нигеҙҙәре менән ҡоралландырырға кәрәк.

Михаил Иванович коммунистик тәрбиәләү ингеҙҙәрен фиҙаҡәр хеҙмәттә күрҙе. «Беҙ коммунистик тәрбиә тураһында һөйләйбеҙ икән, — ти ул, — был һәр бер работниктең аңына ул үҙенең эшен элементарь генә булһа ла намыҫлы башҡарырға тейеш, тигән фекерҙе индереү тигән һүҙ». Һәм был фекер, тип күрһәтте иптәш Калинин, совет кешеләренең һәм бөтәһенән дә элек йәштәрҙең йөрәгенә һәм аңына нығ урынлашырға тейеш.

Халыҡ байлығын һаҡлау һәм хөрмәт итеү, государство алдындағы бурыстарҙы намыҫ менән үтәү, общественный интерестарҙы бөтәһенән дә юғары ҡуйыу, Ватан хаҡына бөтә көсөңдө һәм һәләтлегеңде биреү — быларҙың бөтәһе лә, М. И. Калинин бер нисә тапҡыр күрһәткәнсә, яңы социалистик кешенең айырылғыһыҙ черталары улар.

М. И. Калинин социалистик Тыуған илгә, уның героик революцион традицияларына мөхәббәтте үҫтереү, йәшәү өсөн биреүсе совет патриотизмын үҫтереү коммунистик тәрбиәләүҙең мөһим элементы булып тора, тип иҫәпләне. «Беҙ СССР-ҙың бөтә хеҙмәтсәндәрен ялҡынлы патриотизм рухында, үҙ Тыуған иленә иксеһеҙ-сикһеҙ һөйөү рухында тәрбиәләргә тейешбеҙ» тине ул 1940 йылда Мәскәү ҡалаһы партия активы йыйылышында.

М. И. Калинин Маркс, Энгельс, Ленин, Сталин учениеһының ялҡынлы пропагандисе булды. Беҙҙең илебеҙ бығаса күрмәгән йылдам темптар менән үҫә, тип күрһәтте ул. Һәр көн һайын кешелек донъяһының хыялы—коммунизм һаман да яҡыраҡ, күҙгә күренерлегерәк черталар ала бара. Был шарттарҙа алдынғы марксистик-ленинсе идеяларҙың роле һис ваҡыт булмағанса үҫә, М. И. Калинин беҙҙең кадрҙарыбыҙҙы һәр ваҡыт марксистик-ленинсе теорияға, иң алдынғы һәм иң прогрессив булған партияның теорияһына арымай-талмай һәм тәрән эйә булырға саҡырҙы.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында М. И. Калинин үҙенең бөтә көсөн немец-фашист баҫҡынсыларын тар-мар итеү эшенә бирҙе. Фронттарҙа һәм тылда совет патриоттары үҙҙәренең Тыуған илдәре данын ҡаһарман эшләгән подвигтәре өсөн уның телмәрҙәренән һәм сығыштарынан көс алдылар. Ул, совет халҡының ҡеүәтле, еңеүсән көсөнә ҡайнар ышанып, былай тине: «Беҙ еңеүебеҙгә ышанабыҙ, сөнки беҙҙең илдә совет ерен бер генә гитлерсе талап йөрөмәйәсәк, гитлеризм утлы тимер менән ашыҡлап бөтөрөлгәнгә тиклем бер генә совет кешеһенең дә тынысланмаясағын беҙ беләбеҙ».

Ленин—Сталин партияһына иксеһеҙ-сикһеҙ бирелгәнлеге, хеҙмәтсәндәрҙең киң массаһы менән тығыҙ бәйләнеше, яҡшы һәм саф күңелле булыуы менән Михаил Иванович бөтә халыҡтарҙың ысын мөхәббәтен ҡаҙанды.

М. И. Калининдең яҡты һәм изге образы халыҡ хәтерендә мәңге йәшәр һәм беҙҙең совет кешеләрен коммунизм өсөн фиҙаҡәр көрәшкә рухландырыр.

Ситтән тороп уҡыусыларҙың йәйге сессияһын ойошҡанлыҡ менән үткәрәйек!

Большевиктар партияһы һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин етәкселегендә Тыуған илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре, хужалыҡ төҙөлөшөндәге кеүек үк, культура фронтында ла йылдан-йыл ғайәт ҙур уңыштарға өлгәшәләр. Бөтә илебеҙ буйынса инде ете йыллыҡ мәжбүри уҡыу тормошҡа ашырыла. Урта мәктәптәрҙең, техникумдарҙың һәм юғары уҡыу йорттарының селтәре өҙлөкһөҙ киңәйә бара һәм был мәктәптәр өсөн юғары квалификациялы уҡытыусылар кадрҙары әҙерләү бурысын алға ҡуя. Ошо бурысты үтәүҙә Башҡорт педагогия һәм уҡытыусылар институттары, уларҙың ситтән тороп уҡытыу бүлектәре бик ҙур эш алып баралар.

Педагогия институтының ситтән тороп уҡытыу бүлеге 1949 йылда 1092 уҡытыусыны, 1950 йылда 1279 уҡытыусыны уҡыуға йәлеп итте. Хәҙерге көндә институтта ситтән тороп уҡыусылар һаны 4500 кеше иҫәпләнә. Был һан һуғыштан һуңғы беренсе йылдарға ҡарағанда өс тапҡырға артыҡ. Шул уҡ ваҡытта ситтән тороп уҡыусылар сессияларға йылдан-йыл күберәк киләләр, әҙмә эштәрҙе һәм курс экзамендарын ваҡытында тапшырыусыларҙың һаны өҙлөкһөҙ арта. Мәҫәлән, 1947 йылдың ҡышҡы сессияһына 486 кеше килгән булһа, 1950 йылдағы ҡышҡы сессияға 1450 кеше ҡатнашты.

Экзамен биреүселәрҙең, курстан-курсҡа күсә барыусыларҙың һаны күбәйә. Был институтты ситтән тороп уҡыу юлы менән тамамлаусылар һанының бик ныҡ артыуына килтерҙе. 1947 йылда 64 кеше, ә 1950 йылда инде 150 кеше институтты тамамланы. Һуңғы 4 йыл эсендә бөтәһе 427 кеше институтты тамамлап, юғары квалификациялы уҡытыусы исемен алды.

Был уңыштарға партия һәм совет ойошмаларының ярҙамы менән тороп ярҙам итеүҙәре һәм институт уҡытыусыларының ныҡышмалы эшләүҙәре һөҙөмтәһендә өлгәшелде. Бигерәк тә йәйге һәм ҡышҡы сессиялар осоронда институттың уҡытыусылары ҙур эштәр башҡарҙылар. Үҙған йәйге сессияла 7015 сәғәт лекция уҡылды, 4072 сәғәт семинар һәм лаборатория занятиелары үткәрелде.

Ләкин ошо уңыштар менән бер рәттән, ситтән тороп уҡытыу эшендә күп кенә етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Ҡала һәм район мәғариф бүлектәре, мәктәп мөдирҙәре ситтән тороп уҡыусы күп кенә уҡытыусыларҙың сессияларға килеүҙәрен тәьмин итмәйҙәр. Ауыл ерҙәрендәге ситтән тороп уҡыусылар уҡыу китаптары менән тәьмин ителмәгәндәр. Сессиялар араһындағы осорҙа консультациялар аҙ ойоштороласаҡ.

1951 йылдың йәйге сессияһын ойошҡан рәүештә үткәреү бурысы тора. Был сессияла ситтән тороп уҡыусыларға етемең сәғәткә яҡын лекциялар уҡыласаҡ. Консультациялар биреү, экзамендар тапшырыу эштәре лә киң күләмдә планлаштырылды. 2 июлдән башлап 4 августҡа тиклем ваҡытта үткәреләсәк сессияға ситтән тороп уҡыусыларҙың бөтәһенең дә килеүҙәрен тәьмин итергә кәрәк.

Шулай уҡ госэкзамендарға әҙерләк эштәре лә киң йәйелдерелде. Быйыл госэкзамен биреүселәр 15 июнгә институтҡа саҡырылалар. Улар өсөн айырым лекциялар, консультациялар ойоштороласаҡ. Бөтә уҡыусылар 15 июнгә тиклем тейешле булған контроль эштәрҙе үтәп, институтҡа тикшереү өсөн ебәрергә тейештәр. Шулай уҡ айырым фәндәрҙән ҡалған задолженностарын эшләп бөтөрөргә бурыслылар.

Институтта ситтән тороп уҡыусыларҙың йәйге сессияһын ойошҡанлыҡ менән үткәреүҙе тәьмин итеү — республика мәктәптәренең артабанғы уңышлы эшләүенә өлгәшеүгә табан мөһим һәм ҙур аҙым булып торасаҡ.

Ә. Янгуразов.

Профсоюз ойошмаларының отчет-һайлау йыйылыштары карарҙарын тулыһынса үтәргә

Өфөлә Башпрофсоветтең икенсе пленумы булып үтте. Көн тәртибендәге беренсе мәсьәлә буйынса пленум республикабыҙҙың Ауыл хужалығы министерствоһы предприятиеләрендә коллектив договорҙарҙың үтәлеше тураһында БАССР ауыл хужалығы министре урынбаҫары Комаров, МТС һәм ер органдары эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре профсоюзының өлкә комитеты председателе Харин иптәштәрҙең докладтарын тыңланы.

Докладсылар һәм докладтар буйынса фекер алышыуҙарҙа сығып һөйләүселәр республикабыҙҙағы машина-трактор һәм урман полосаларын үҫтереү станцияларының, ремонт заводтарының эшендәге күп кенә уңышлыктарҙы күрһәттеләр. Партиябыҙҙың һәм хөкүмәтебеҙҙең ауыл хужалығын үҫтереү буйынса күргән ҙур хәстәрлектәре һөҙөмтәһендә Башкортостанда ауыл хужалығы үҫә һәм машиналар һаны йылдан-йыл арта. Шаран, Приют, Дәүләкән һәм башка күп кенә МТС-тар быйылғы яҙғы сәсеү пландарын уңышлы үтәнеләр.

Ләкин Ауыл хужалығы министерствоһы предприятиеләренең эшендә етешһеҙлектәр бик күп әле. Күп кенә предприятиеләрҙә коллектив договорҙар насар үтәлә, уларҙың үтәлешен тикшереү ойошторолмаған. Министерство һәм профсоюздың өлкә комитеты үҙҙәре коллектив договорҙарға тейешле иғтибар бирмәйҙәр. Ошо көнгә тиклем министерствоға регистрацияға килтерелгән 77 договор предприятиеләргә ебәрелмәгән. Профсоюздың өлкә комитетында 13 договор ята. Политик һәм хужалык яғынан ҙур әһәмиәткә эйә булған коллектив договорға тейешле әһәмиәт биреп еткермәү һәм уларға йыш кына бюрократтарса карау арҡаһында уларҙың күбеһе үтәлмәй кала. МТС-тарҙың тулы көүәтендә эшләмәүҙәре, булған техниканы тулыһынса файҙаланмау быйыл яҙғы сәсеүҙе май аҙағына тиклем һуҙыуға килтерҙе. Баҫыу һаклаусы урман полосалары ултыртыу планы 20 майға ни бары 77 процентка ғына үтәлде. Күп кенә МТС-тарҙа тракторҙарға вакытында ремонт үткәрелмәй. Шул аркала туктап тороуҙар күп була. Май айының 10 көнө эсендә генә тракторҙар 272 мең сәғәтте бушка уҙғарҙылар. МТС-тарҙа яғыулыктарға экономия яһау өсөн кәрәш етерлек ойошторолмаған, эштең үҙенә төшеү хакы юғары.

Ауыл хужалығы министерствоһы предприятиеләрендә социалистик ярыш йомшак ойошторолған. Алған йөкләмәләрҙең үтәлешен тикшереү үткәрелмәй һәм ай һайын йомғак яһалмай. Производство кәңәшмәләре һирәк уҙғарыла һәм унда яҡбул ителгән тәкдимдәр үтәлмәйҙәр. Производство алдынғыларының эш методтарын таратыу эшенә иғтибар бирмәйҙәр. Л. Корабельникова һәм инженер Ковалев методтарын кулланмайҙар. Күп кенә трактор бригадалары Иван Бунеевтең саҡырыуына кушылмағандар. Белокатай, Ермолаевка, Хәйбулла МТС-тарының етәкселәре яңы торлак йорттары төҙөү тураһындағы коллектив договорҙа алынған йөкләмәләрен үтәмәйҙәр.

Ремонт заводтарында йәш эшселәргә тейешле шарттар тыуҙырмау факттары бар. Күп кенә предприятиеләрҙә магазин һәм столовойҙарҙың эшенә контроль алып барылмай. Архангель, Бакалы, Бөрө МТС-тарының кыҙыл мөйөштәре ябык, уларҙы башка ихтыяждар өсөн файҙаланалар. Министерствоның предприятиеләрендә культура-массовый эштәр йомшак куйылған.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа сығып һөйләүселәрҙән Баймак МТС-ы директоры Кадиров, Кариҙел МТС-ы рабочкомы председателе Колочева иптәштәр МТС һәм ер органдары эшселәре профсоюзы өлкә комитетының коллектив договорҙарҙың үтәлешен насар тикшереүен һәм түбәнге ойошмалар менән насар етәкселек итеүен күрһәттеләр.

— Кариҙел МТС-ында министерствонан да, профсоюз өлкә комитетынан да килеүсе кеше юк, — тине иптәш Колочева. — Беҙҙең эшебеҙҙә етешһеҙлектәр күп, әгәр беҙҙең етешһеҙлектәребеҙҙе күреүсе, уларҙы бөтөрөү өсөн юлдар күрһәтеүсе булһа, һис шикһеҙ, эш яҡшырыр ине.

Фекер алышыуҙарҙа Лаврищева, Руковишникова, Баратынская, Колотов, Кильдебаков һәм башка иптәштәр катнаштылар.

Башпрофсовет председателе иптәш Улин үҙенең сығышында Ауыл хужалығы министерствоһын һәм профсоюз өлкә комитетын коллектив договорҙарға баһа биреп еткермәгәндәре өсөн каты тәнкитләп, уларҙың алдына конкрет бурыстар куйҙы.

Көн тәртибендәге икенсе мәсьәлә буйынса пленум урман һәм һал ағыҙыу эшселәре профсоюзы өлкә комитеты председателе иптәш Зайцевтың отчет-һайлау йыйылыштары карарҙарының үтәлеше тураһындағы докладын тыңланы. Был доклад буйынса 16 кеше сығыш яһаны. Ғабитов, Хәсәнов, Соколовский, Швецов, Садыков, Ибраһимов, Цареградцев, Домрычев һәм башка иптәштәр урман һәм һал ағыҙыу эштәре профсоюзы өлкә комитеты отчет-һайлау йыйылышынан һуң ойоштороу эштәрен йәнләндерә башланы, тип билдәләнеләр. Профсоюзға членлек взносы йыйыу планы 104 процентка үтәлде.

Шуға карамаҫтан, профсоюз өлкә комитетының эшендә етешһеҙлектәрҙә күп әле. Өлкә конференцияла һәм отчет-һайлау йыйылыштарында күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн профсоюздың өлкә комитеты конкрет саралар күрмәгән. Тәнкитле иҫкәртеүҙәрҙән сығып үҙенә һөҙөмтә яһамаған. Урман предприятиеләрендә социалистик ярышты киң йәйелдереү, культура ағартыу эштәрен яҡшыртыу буйынса эш кәнәғәтләнерлек бармай. Социалистик ярышта эшселәрҙең 75 проценте генә катнаша. Предприятиеләрҙә эшләүсе бик күп кешеләр көндәлек нормаларын үтәмәйҙәр. Профессия буйынса ярыш ойошторолмаған. Шул аркала урман промышленносе предприятиеләре быйыл беренсе квартал планын 97 процентка ғына үтәнеләр. Бигерәк тә Архангель, Юрүҙән, Кариҙел леспромхоздары рабочкомдары насар эшләйҙәр. Был профсоюз ойошмаларында дөйөм йыйылыштар уҙғарылмай, производство кәңәшмәләре бик һирәк була, массовый-политик эштәр насар алып барыла.

Профсоюз өлкә комитетының активе күп. Ләкин был ныҡ һәм ышаныслы көскә баһа бирелмәй. 138 рабочком председателенән тик 31 генә кеше семинарҙа уҡытылған. Һуңғы отчет-һайлау йыйылышында беренсе башлап профсоюз эшенә һайланған 50 кешенән семинарҙа 13-ө генә булған.

Профсоюздың өлкә комитеты работниктәре леспромхоздарҙа һал ағыҙыу пункттарында, лесхоздарҙа, урман һаклау станцияларында һирәк булалар. Профсоюздың түбәнге ойошмаларына практик эштә аҙ ярҙам күрһәтәләр.

Пленум тикшерелгән мәсьәләләр буйынса конкрет карар кабул итте.

З. Фәттәхов.

Эш темпы күтәрелә

Кем генә һуң яҡшы юлдан, төҙөк күперҙән йөрөргә яратмай! Кайҙа юл яҡшы, ул урынды шоферҙар ҙа, башка юлсылар ҙа маҡтап үтәләр. Әгәр ҙә боҙок юлдарҙан һәм ватык, иҫке күперҙәрҙән йөрөүсе машиналарҙың, арбаларҙың һәм тағылма инвентарҙарҙың тиҙ туҙыуын иҫәпләһәң, был сумма миллиондарса һум акса средствоһын тәшкил итеүен күҙ алдына килтереүе кыйын түгел. Яҡшы юлдар ошондай ҙур расходтарға экономия яһай, техниканы һаклай, тағылма инвентарҙарҙы кыйратмай. Бына шуның өсөн дә беҙҙең колхоздың члендәре юл төҙөү эшен, юғары урожай өсөн кәрәш кеүек үк, иүаплы бурыс итеп һанайҙар һәм намыҫлы эшләйҙәр.

Ленин исемендәге беҙҙең колхоз быйыл юл төҙөү айлығында 400 кубометр кырсын таш, 1000 кубометр ер казырға һәм ташырға, 20 кубометр ағас эҙерләргә тейеш. Был эште кыҫка срокта тамамлау өсөн юл ремонтлау эшенә 80 кеше һәм 20 ат составында 5 бригада төҙөлөк. Улар менән стахановсы колхозсылар етәкселек итәләр. Эш заданиеһе менән бөтә кеше лә таныш. Улар индивидуаль сдельщина нигеҙендә эшләйҙәр. Социалистик ярышта Андрей Апаев етәкселек иткән 4-се номерлы бригада члендәре ер казыуҙа ла, таш сығарыуҙа ла эш заданиеһен 150 — 250 процентка үтәйҙәр.

Эшселәр өсөн бөтә тормош шарттары тыуҙырылған. Сауҙа ойошмаларының ларектары эшләй.

Колхозсылар тәүге 5 көндә 400 кубометр ер казынылар һәм 100 кубометр кырсын таш сығарҙылар. Эш темпы көндән-көн күтәрелә бара.

Алексей Апаев,
Мишкә районы, Ленин исемендәге колхоздың председателе.

Дүртөйлө хеҙмәтсәндәре саҡырыуы буйынса

Маҡар районының бөтә мәктәп коллективтәре дүртөйлөләр мөрәжәғәтенә кушылып, мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү эштәрен башлап ебәрҙеләр.

Кинйәбулат башланғыс мәктәбе һәм уның уҡытыусылары өсөн 130 кубометр утын әҙерләнеп, бының артыһы ташылып та куйылды. 50 яңы парта һатып алынды. Мәктәпте ремонтлау өсөн тейешле материалдар әҙерләнде.

Канаҡай башланғыс мәктәбендә лә (мөдире иптәш Вилданов) яңы уҡыу йылына әҙерлек эштәре яҡшы ойошторолдо. 70 кубометр утын әҙерләнде, 50 дана парта, етерлек һанда класс такталары, өҫтәл, ултырғыс һәм башка инвентарҙар алынды. Янрус, Әрмет, Ишәй, Әрмет-Рахим мәктәптәрендә лә яңы уҡыу йылына әҙерлек яҡшы бара.

З. Низамов.

Воскресник ҙур ойошканлык менән үтте

Канэра районы хеҙмәтсәндәре дүртөйлөләрҙең яңы уҡыу йылына әҙерлек буйынса мөрәжәғәтен ҙур күтәренкелек менән каршыланылар.

Күптән түгел район үҙәгендәге яңы төҙөлә башлаған урта мәктәп бинаһына төҙөлөш материалдары әҙерләү буйынса ҙур воскресник уҙғарылды. Унда бөтәһе 500-гә яҡын кеше һәм 50 автомашина катнашты. Һөҙөмтәлә 200 кубометр таш, 200 кубометр ком һәм төҙөлөш өсөн етерлек күләмдә такта ташылды.

Хәҙер мәктәп һәм уҡытыусылар өсөн утын әҙерләү эштәре алып барыла.

Ф. Фәйрушин.

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Коммуналь предприятиеләрҙең эшен Советтәрҙең иғтибар үҙәгенә

Беҙҙең илебеҙҙә коммуналь предприятиеләр төҙөүгә һәм уларҙың көүәтлелеген киңәйтеүгә йыл һайын ебәрелә торған ҙур ассигнованиеләрҙән тыш, оборудованиеләрҙе, инвентарҙарҙы капиталь ремонтлауға һәм яңыртыуға ла бик ҙур средство һалына. 1950 йылда Башкортостан калаларында коммуналь предприятиеләрҙе ремонтлауға ғына 3 миллион һум самаһы средство тотонолған. Билдәле, был средстволар республикабыҙ коммуналь предприятиеләренең эшен яҡшыртыуға ҙур булышлык итте. 1948 йылда трамвай, мунса, кер йыуыу, электростанция кеүек хужалык тармактары халыкты коммуналь хеҙмәтләндереү планын систематик үтәмәй килһәләр, 1950 йылда һәм 1951 йылдың I кварталында инде республика күләмендә планды үтәмәүсе хужалык тармактары булманы. Хеҙмәтсәндәрҙе коммуналь хеҙмәтләндереү эшенең сифаты байтак яҡшырҙы.

Ләкин халыкты коммуналь-хужалык яғынан хеҙмәтләндереү буйынса республикабыҙ калалары коммуналь предприятиеләренең эшендә күп кенә серьез етешһеҙлектәр йәшәп килә. Благовещен һәм Бөрө калаларының мунса һәм парикмахерскийҙәре, Белорет калаһының электр селтәре, кер йыуыу, каланы таҙартыу контораһы һәм башкалар билдәләнгән пландың үтәлешен тәьмин итмәйҙәр. Бәләбәйҙең кала таҙартыу контораһы, Черниковск калаһының мунсаһы эште байтак йомшарттылар.

Республикабыҙ калаларындағы коммуналь предприятиеләрҙән 1950 йылда һәм 1951 йылдың I кварталында 10 предприятие планды үтәмәне.

Өфө водоканал тресы, каланың мунсалары халыктың талабын кәнәғәтләндерә алмай.

Колонкаларҙа һыу булмау, бигерәк тә кышкы осорҙа уларҙың йыш кына ватык булыуҙары һөҙөмтәһендә һыу алыу өсөн сират йыйналыу вакиғалары була. Мунсаларҙа күп вакыт эҫе йәки һалкын һыу булмай, мунса эсендә вентиляция эшләмәй, инвентарҙарҙың тороშо насар.

Беренсе нәүбәттә халык ихтыяждарын тәьмин итеүгә, йорт хозяйкаларының хеҙмәтен еңеләйтеүгә саҡырылған кер йыуыу урындары шулай уҡ асылда предприятиеләр һәм учреждениеләрҙе хеҙмәтләндерәләр. Мәҫәлән, Өфө калаһы кер йыуыу урындарында бөтә йыуылған керҙең дөйөм күләменән 1950 йылда 4,8 проценте, 1951 йылдың I кварталында 7,2 проценте генә граждандар өсөн индивидуаль йыуыуға тура килә.

Кала Советы исполкомдары коммуналь-хужалык предприятиеләренең эшенә анализ яһап, уларҙың эшмәкәрлектәрен яҡшыртыу буйынса тейешле саралар күрмәйҙәр.

Халыктың коммуналь-тормош талаптарын хеҙмәтләндереүҙә кала Советы исполкомдарының эшендә иңенсе бер төп етешһеҙлек булып коммуналь предприятиеләрҙең селтәрен киңәйтеү, уларҙың көүәтен арттырыу буйынса систематик эш алып бармау тора. Коммуналь предприятиеләр селтәрен үҫтереү калаларҙа халык һанының артыуынан ныҡ артта кала, һәм уларҙың йәшәп килгән көүәте халыктың талаптарын кәнәғәтләндерә алмай.

Коммуналь предприятиеләр төҙөүгә ебәрелгән ҙур суммалар йылдан-йыл үҙләштерелмәй калалар, төҙөү эштәре оҙакка һуҙыла. Белорет һәм Стәрлетамак калаларында механизациялаштырылған водопроводтар һаман да төҙөлөп бөтмәгәндәр. Был калаларҙа халыкты һыу менән тәьмин итеү бик насар хәлдә тора. Стәрлетамакта бер юлы илле кешене йыуындырырлык бер генә мунса эшләй, ә яңы мунсаны төҙөп бөтөрөү эшен тиҙләтмәйҙәр.

Өфө калаһында трамвай депоһын, Дәүләкәндә электр станцияһын төҙөү эше сиктән тыш аҡрын бара.

Күп кенә вакиғаларҙа коммуналь предприятиеләр төҙөүҙә механизмдар тулыһынса файҙаланылмайҙар, эште насар ойоштороу арҡаһында эшселәр вакытты эшһеҙ үткәрәләр. Төҙөлөш расходтарын кыҫкартыу өсөн кәрәш ойошторолмаған.

Урындағы Советтәр төҙөү эшенең срогын кыҫкартыу, төҙөлештең сифатын яҡшыртыу өсөн ныклы кәрәш йәйелдерергә тейештәр. Был бурысты уңышлы хәл итеү өсөн төҙөү эштәрен ойоштороуҙы яҡшыртырға, төҙөлөш эшендә алдынғы методтарҙы кыйыуырак индерергә, стахановсыларҙың, новаторҙарҙың ижади инициативаларын яҡларға кәрәк.

Яңы коммуналь предприятиеләрҙе төҙөү һәм эксплуатацияға тапшырыу темпын тиҙләтеүҙә урындағы Советтәр ҙур роль уйнайҙар. Кала, район, поселка Советтәренең исполкомдары төҙөү һәм эксплуатацияға тапшырыу планының үтәлешен тәьмин итергә саҡырылғандар.

Коммуналь предприятиеләрҙе һаклап тотоу һәм дөрөҫ эксплуатациялауҙы тәьмин итеү урындағы Советтәрҙең һәм хужалык органдарының мөһим бурысы булып һанала. Коммуналь предприятиеләр төҙөү һәм ремонтлау өсөн государство тарафынан ебәрелгән средстволар тулыһынса һәм максималь етештереүсәнлектә итеп файҙаланылырға тейеш. Йәйге вакытта коммуналь-хужалык предприятиеләренә ремонт үткәреп, уларҙы кышкы сезонға үҙ вакытында әҙерләргә кәрәк.

Урындағы Советтәр коммуналь предприятиеләрҙең эштәренә ентекле анализ яһау һәм ярҙам итеү юлы менән уларҙың эшмәкәрлегендә йәшәп килгән етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөргә бурыслылар. Коммуналь предприятиеләрҙең бөтә эше урындағы Советтәрҙең иғтибар үҙәгендә булырға тейеш.

А. Баҙамшин,
Башҡорт АССР-ы коммуналь-хужалык министре урынбаҫары.

Алдынғы ауыл Советенең депутаттары

Дәүләкән районы Поляковка ауыл Советенең һайлаусылары Иван Андреевич Лопановты ауыл Советына өсөнсө тапҡыр депутат итеп һайланылар инде. Сөнки ул һайлаусыларҙың ышанысын эш менән аҡланы, үҙен ысын халык хеҙмәтсеһе итеп күрһәтте һәм шуның менән масса араһында ҙур авторитет яулап алды.

Иван Андреевич күп йылдарҙан бирле ошо ауыл Советенең председателе булып эшләй, тәжрибәле совет работнигы. Уның етәкселегендә ауыл Советы хужалык һәм культура төҙөлөшө мәсьәләләрен, хужалык-политик бурыстарын уңышлы башкарып, райондың башка ауыл Советтәре араһында алдынғылар сафында бара. Үткән йылда хужалык-политик бурыстарын уңышлы үтәгәне өсөн ауыл Советы БАССР Министрҙар Советының күсмә Кыҙыл Байрағын яулап алғайны һәм уны быйыл да үҙендә һаклай.

Ауыл Советенең депутаттары Совет эшендә актив катнашалар, үҙ һайлаусылары араһында ҙур ойоштороу-массовый эш алып баралар. Бында һәр бер депутат билдәле бер эш участкаһына беркетелгән һәм шуны тормошка ашырыу өсөн бөтә көсөн һалып эшләй. Бына «Новая жизнь» колхозының члены, депутат Степан Митрофанович Стручков—ул Советтең ауыл хужалығы даими комиссияһы менән етәкселек итә.

Эрәлтелгән колхоздың председателе, Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР Верховный Советы депутаты Тихон Егорович Алехин колхозды ойоштороу-хужалык яғынан нығытыу өсөн, мул урожай үҫтереү һәм общественный малсылыкты алға ебәреү өсөн намыҫлы кәрәшә. Колхозсыларҙың фекерҙәрен ошо мөһим бурыстарҙы уңышлы үтәүгә туплай, Баҫыу эштәренә тәшкәндән бирле көнөн дә, төнөн дә баҫыуҙа, колхозсылар араһында була.

Ауыл Советенең депутаттары С. Мосяков, Ф. Липатов, П. Стаханова, С. Стручков иптәштәр яҙғы сәсеүгә әҙерлек һәм уны үткәреү осорҙарында колхозсылар араһында социалистик ярыштың инициаторҙары булдылар. Ойошканлык менән эшләү һөҙөмтәһендә иртә культуралар сәсеү алты көндә тамамланды. 1128 гектар бойҙай, 267 гектар һоло, 150 гектар көнбағыш һәм башка культуралар тик теҙмә сәскес менән генә сәселде.

Поляковка ауыл Советы депутаттарының эшлекле ярҙамында «Новая жизнь» колхозы общественный малсылыкты үҫтереү буйынса ла алдынғылар рәтендә бара. Ауыл хужалығы артелендә МТФ, ОТФ, СТФ һәм кошсолок фермаһы бар. Мөгәҙле эре малдарҙы, суҫкаларҙы үрсетеү планы тулыһынса үтәлгән. Ә аттар, ваҡ малдар, коштар буйынса план үтәлеше 130 — 133 процент тәшкил итә. Бында умартасылык та ныҡ алға киткән.

Культура-ағартыу эштәре даими комиссияһы ла яҡшы эшләй. Депутаттарҙың булышлығында ауыл Советы күләмендәге ете йыллык һәм башланғыс мәктәптәр 1950 — 1951 уҡыу йылына өлгәле әҙерләнеү һөҙөмтәһендә, бөтә балалар ҙа уҡыуға йәлеп ителде. Поляковка ете йыллык мәктәбе Дәүләкән районында ғына түгел, республика күләмендә алдынғыларҙың береһе һанала.

Уҙған йылдарҙа юғары урожай үҫтергән, малсылык бурысын уңышлы хәл иткән өсөн Поляковка ауыл Советында 23 кеше Советтәр Союзы ордендәре һәм медалдәре менән награҙланды.

Был алдынғы ауыл Советенең депутаттары бөтә хужалык тармактарында ла уңыштарҙы арттырыу өсөн колхозсылар араһында социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйелдерәләр. Игенселек һәм малсылык буйынса еңеүҙе тәьмин итеп, улар Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә катнашыу хокуғы алыу өсөн кәрәшәләр.

Ауыл эшсәндәре хужалык-политик бурыстарын үтәүҙә актив катнашалар. Ауыл Советы күләмендә яңы заемдың уңышлы таратылыуы — ул социалистик ауыл хужалығын йылдам күтәреү өсөн колхозсыларҙың үҙҙәренең намыҫлы хеҙмәттәре менән бергә, һаклык средстволары менән дә булышлык итергә әҙер торғанлыктарын күрһәтә.

F. Үлмәсов.

Коммунизм төҙөлөштәрендә

Кара-Комға һөжүм итеү

Кара-Комда яҙғы көндәр үҙҙәренең матурлыктары менән ғәжәпкә калдыралар. Һөрө комдарҙы төрлө сәскәләр менән биҙәкләнгән үләндәрҙең йәшел балаҫы капланған. Самолеттан тирә яғыңа караған вакытта мәрхәмәтһеҙ сүллек өҫтөнән осоп барыуыңды онотаһың. Ләкин бына самолет канаты аҫтында Копетдаг алды тигеҙлегенең тар полосаһы юғала һәм комлок башлана. Ком калкыулыктары саксауылдың куйы кыуаклығы менән капланғандар.

Хәҙер моторҙар тауышы мәңгелек сүллектә йәнһеҙ тынлыкты боҙа. Автомашиналар, самолеттар Кара-Комға ғалимдәрҙе, эҙләнеү партияларының работниктәрен, Төп Төркмәнстан каналын төҙөүселәр өсөн оборудованиеләр һәм материалдар килтерәләр. Буласак канал трассаһында эштәр көндән-көн киңерәк йәйелдерелә бара. Улар сүллекте үҙгәртәсәктәр, һыу тураһында, муллыктың алтын туғайҙары тураһында төркмән халкының хыялдарын тормошка ашырасактар, был туғай Кара-Комдың нә үҙәгендә, Төп Төркмәнстан каналы зонаһында буласак.

Беҙҙең пилот иптәш Хитрых машинаны бороп Узбой йылғаһының йырҙаһына алып бара. Был маршрут буйынса ул эҙләнеү партияларына яңы кәс — топографтар, геологтар, геодезистар, бораулаусылар, шулай уҡ аҙык-түлек, инструменттар һәм бораулау вышкалары өсөн оборудованиеләр килтереп, һәр көн һайын рейстәр яһай.

Түбәндә ғәйәт ҙур кыйынлык менән автомашиналар комдар аша үтәләр. Улар шулай уҡ төньякка табан юл тоталар, Төп Төркмәнстан каналы трассаһына йөк ташыйҙар. Казанджик тимер юл станцияһынан Яскан күлгә тиклем автомашинаның һәр бер рейсе — ысын хеҙмәт подвигы ул. Алдынғы шоферҙарҙың, комдарҙы штурмлаусыларҙың исемдәрен төҙөүселәрҙең ошондай мөхәббәт менән әйтеүҙәре осраклы ғына түгел.

Узбойға йөк илтеү — ауыр бурыс. Ләкин уны совет кешеләре кыйыу хәл итәләр. Шуны ла әйтеү етә, бер рейс яһау өсөн кәрәк булған уртаса вакыт хәҙер, үткән йылдың декабренә сағыштырғанда, бер нисә тапкырға кәмене. Юлдарҙа ял итеү базалары булдырылғандар, гусеницалы тракторҙар — тягачтар йөрөйҙәр, улар автомашиналарға юлдың айырыуса ауыр участкаларын үтеп сығырға ярҙам итәләр.

...Сәсә Яскан күле янында Төркмәнстан геология экспедицияһының палаткалары куйылған. Һыуҙың киң лентаһы кояшта күҙҙе сағылдырырлык итеп ялтырай. Яр буйҙарында бейек ағастар үҫәләр. Камышлыктарҙан куркыу тауыштары сығарып өйрәктәр осоп сығалар.

Узбой болононоң икенсе яғында Гидропроекттың 33-сө экспедицияһының короломалары күренәләр, ә уларҙан алыҫ түгел 24-се геодезия отрядының палаткалары куйылған. Был лагерь ситендә яңғыҙ төркмән тирмәһе тора. Унда комлоктарҙа колхоздарҙың карауыл һарыктарының көтөүҙәрен көтөүсе чабандар йәшәйҙәр. Тәбиғи байлыкты тәшкил иткән был ғәйәт ҙур районда Яскан диңгеҙе буласак. Буйы буйынан ул Мәскәү диңгеҙенән калышмаясак. Бында көүәтле гидроэлектростанцияһының бууаһы Узбойҙы бууасак.

Тикшеренеү эштәренең күләме ҙур. Билдәле булыуынса, Төп Төркмәнстан каналы 1100 километрға һуҙыласак. Айырым һуғарыу һәм һыу менән тәьмин итеү каналдары 1200 километрға, халык йәшәй торған пункттарҙы һәм промышленность предприятиеләрен каналдарҙан һыу менән тәьмин итеү өсөн ҙур трубопроводтар бер мең километрға һуҙыласак. Аму-Дарьяла һәм каналда дөйөм көүәте 100 мең киловатт булған өс гидроэлектростанция королаcак.

Каналда эҙләнеү эштәре бер үк вакытта трассаның төньяк һәм көньяк өлөшөндә—Тахна-Таш моронында һәм Яскан күле тирәһендә башланды. Хәҙер разведчиктар, икс армия кеүек, осрашыу өсөн һәм:

— Бына, иптәштәр, беҙҙең боевой бурысыбыҙ үтәлде. Хәҙер каналды кыйыу проектлаштырырға һәм төҙөлөштө йәйелдерергә мөмкин, — тип шатланып әйтеү өсөн бер-береһенә каршы хәрәкәт итәләр.

Топографтарҙың һәм геологтарҙың, геодезистарҙың һәм гидрогеологтарҙың, бораулаусыларҙың һәм шоферҙарҙың ғүзәл уңыштары тураһындағы хәбәрҙәр бөтә урындарҙан да киләләр.

24-се отряд геодезистәре:

— Отряд коллективы беренсе кварталдың тикшеренеү эштәре планын 112 процентка үтәне. Техник иптәш Босанин һәм инженер иптәш Шашкиндең нивелировка бригадалары иң яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәштеләр, — тип рапорт бирәләр.

— Яскан күле районында 500 квадрат километр майҙанда гидрогеологик тәшереп алыу үткәрелде. Урындарҙы тәшереп алыу буйынса комплекслы эштәр кәсәйтеләләр, — тип хәбәр итәләр гидрогеологтар.

Беренсе квартал заданиеһен срогынан алда тамамлаған «Средазгипрострой» коллективы ҙур уңышка өлгәште. Тахна-Ташта кала төҙөүселәр ҙур эштәргә әҙерләнәләр. Улар буласак урамдарҙың, кварталдарҙың, майҙандарҙың контурҙарын билдәләнеләр ҙә инде һәм күптән түгел Мәскәү архитекторҙарынан беренсе эш чертеждарын алдылар.

Урта Азия йылғасылары Төп Төркмәнстан каналы өсөн йөктәрҙе йылдам ташыу өсөн кәрәшәләр. Пристань урынлаштырылған Тахна-Таш моронона машиналар, механизмдар, төҙөлөш материалдары тейәгән баржаларҙың беренсе караваны килә башланы.

Коммунизмдең грандиоз төҙөлөшөндә катнашыусыларҙың бөтәһе лә ижади хеҙмәт пафосы менән солғап алынғандар. Төҙөүселәр тураһында Тыуған илебеҙҙең, совет халкының һәм иптәш Сталиндең арымай-талмай хәстәрлек күреүе уларҙы яңы хеҙмәт подвигтәренә рухландыра.

Бораулау мастеры Николай Дәбрецов, бөтә төҙөүселәрҙең фекерен белдереп, былай тине:

— Сүллекте буйһондороуҙа катнашыу хеҙмәтенә эйә булғас, Советтәр Союзының бөтә халкы беҙҙең турала хәстәрлек күргәс, бөйөк Сталин хәстәрлек күргәс, нисек инде эшләргә тырышмаһың. Беҙҙә эш һәм тормош өсөн бөтә кәрәкле нәмә бар, илебеҙ беҙҙе ғүзәл техника менән коралландырҙы. Бер туктамай ныкышмалы эшләйек!

Эйе, беҙҙең Тыуған илебеҙҙе тағы ла матурырак һәм көслөрәк итәсәк, беҙҙе коммунизмдең тулы еңеүенә яҡынайтасак бөйөк төҙөлөштә катнашыу — ҙур бәхет ул. Хәҙер бөтә совет кешеләре был бәхетте тойоу менән йәшәйҙәр.

Сүллектәрҙе үҙгәртеү һәм үҙләштереү бурысы совет ғалимдәренең ижади көстәренең ғәйәт ҙур көсөргәнешлеген талап итә. Төп Төркмәнстан каналы трассаһына фәндең төрлө тармактарынан специалистәрҙең әленән-әле яңы отрядтәре киләләр. Күптән түгел Мәскәүҙән СССР Урман хужалығы министерствоһының ғилми-тикшеренеү экспедициялары килде. Төркмәнстандың урман үҫтереүселәре менән бергә улар Кара-Комдың «Йәшел биҙәгеүе» проектын төҙөү менән — Төп канал буйлап, һыу ебәреүсе һуғарыу һәм һыу менән тәьмин итеү каналдары, яңы һуғарыласак ер сиктәре буйлап, шулай уҡ промышленность предприятиеләре һәм халык йәшәй торған пункттар тирәһендә ағас ултыртыу һәм комдарҙы нығытыу менән шөғөлләнәсәктәр. Сүллекте йәшелләндереү буйынса эш башланды ла инде. Буласак канал районында кара саксауылдың һәм башка тиҙ үҫеүсе ағас һәм кыуак токомдарының беренсе 100 гектары ултыртылды ла инде.

Үзбәкстан фәндәр Академияһының комплекслы экспедицияһында иң ҙур ғалимдәр — Үзбәк ССР-ы фәндәр Академияһының действительный члены Е. П. Коровин, Академияның член-корреспонденттәре Б. Д. Коржавин, Х. А. Алимов, профессорҙар С. Н. Рыжов, Ю. А. Скворцов, М. А. Орлов һәм башкалар катнаша. Бөтәһе экспедиция составында 200-гә яҡын ғилми-техник работник бар.

Төп Төркмәнстан каналы беҙҙең Тыуған илебеҙҙең был районындағы халык хужалығының бөтә яҡлап үҫеүен тәьмин итеүсе комплекслы төҙөлөш булып тора. Канал зонаһында мамыксылыкты үҫтереү менән бер рәттән, малдар һаны, бигерәк тә каракуль һарыктар һаны байтак артасак, субтропик һәм емеш ағастары ултыртыласак, виноградниктәр булдырыласак, ебәкселек киң йәйелдереләсәк.

Ерҙәрҙе һыу менән тәьмин итеү һәм Аму-Дарьялағы һәм каналдағы гидроэлектростанциялар бирәсәк электр энергияһы мамык һәм башка техник культуралар, баҡса һәм йәшелсә продукттарын етештереүҙе бер нисә тапкырға арттырырға мөмкинлек бирәсәк, общественный малсылыктың продукт биреүсәнлеген кырка күтәрәсәк.

Әлбиттә, бындай грандиоз программаны тормошка ашырыу ҙур әҙерлек эшен талап итә. Партия һәм совет работниктәре хәҙерҙән үк ғалимдәр-экономистар менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә Аму-Дарья һыуының килеүенә әҙерләнә башланылар. Улар сүллектә 35 яңы административ район булдырыу буйынса эш йөрөтәләр, 50-нән артығырак машина-трактор станцияһын, тиҫтәләгән машина-малсылык станцияларын, мамык таҙартыусы яңы заводтар һәм башка промышленность предприятиеләрен төҙөүҙе әҙерләйҙәр.

...Разведчиктәр лагерендә тымыҡ кис. Бүктә, бик бейектә, йондоҙҙар емелдәй.

Сүллекте буйһондороусылар нә итеүҙең бына ошо кыҫка минуттарында нәмә тураһында һөйләйҙәр һуң, нәмә тураһында уйлайҙар?

Ашхабад экспедицияһының топографтар палаткаһында йәш техник Виктор Зиминдең тауышы ишетелә.

— Бына каналды төҙөү тамамланасак, — ти ул, — һәм мин Мәскәүгә — тура юл менән — һыу юлы менән барасакмын... Мин бит әле Мәскәүҙе бер ҙә күргәнем юк. Саратов техникумын тамамлағанда мин, үҙемде кайҙа ғына ебәрһәләр ҙә, мотлак, Мәскәү аша барасакмын, тип уйланым. Ләкин министерствонан ашығыс телеграмма ебәрҙеләр, һәм миңә Мәскәүгә капма-каршы яҡка самолетта осорға тура килде... Зарар юк, көтөрмөн. Дөрөҫ бит, иптәштәр, был нисәй күңелле сәйәхәт буласак: Сталинград, Куйбышев аша Кара-Комдан теплоходта Мәскәүгә. Бәхеттән хатта йөрәк туктай!..

Викторҙы кемдер бүлә:

— Ихтимал, ул вакытка беҙ бөтәбеҙ ҙә Кара-Комдан күптән инде киткән булырбыҙ, ә һин — сәйәхәт... Беҙ бит топографтар, бөгөн бында, ә иртәгә икенсе төҙөлөшкә киттек.

— Бары бер бында киләсәкбеҙ, — ти ышаныслы тауыш менән Виктор. Мин үҙем, кайҙа ғына булһам да, 1957 йылда бында киләсәкмен, беҙҙең кешеләребеҙ бында эшләйәсәк матурлыкты карасакмын.

Топографтар уның менән риза булалар. Сүллекте үҙгәртеп короу тураһында, Совет Тыуған илебеҙҙең киләсәге тураһында уларҙың һүҙҙәре рухланып яңғырайҙар.

Кешеләр тиҙҙән тормошка ашырыласак киләсәк тураһында хыялланалар.

С. Корнилов
Кара-Кум, Май.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Помидор рассадалары ултыртыу

Помидор йылылыҡты ярата торған үҫемлек. Бер генә градус һалҡын булһа ла, ул һәләк була. Шуға күрә ул тәүҙә 50—60 көн буйына парниктарҙа рассада-лар итеп үҫтерелә һәм тик яҙғы ҡырау-ҙар ҡурҡынысы уҙғас, 10—15 июндәрҙә улар баҡса еренә күсереп ултыртыла.

Помидор ултыртыр өсөн ҡояшҡа ҡарап торған һәм һалҡын елдәрҙән һаҡланған, йылы участкалар һайлана. Бындағы тупраҡ көҙҙән тупға һөрөлөп ҡалдырылған һәм яҙ көнө тырмаланып, культиваци-яланған булырға тейеш. Һәр гектарға 25—30 тонна иҫәбенән серегән тиреҫ һәм уға ҡатнаштырып 450—500 килограмм фосфор, 250—300 килограмм калий һәм азот ашламалары тигеҙ итеп, 12—14 сантиметр тәрәнлектә яңынан һөрөп индерелә. Ер арҡырыға бер әҙҙән тырматы-ла, еңелсә каток менән тупраҡ баҫтырыла.

Рассада 5-6 ботаҡлы, көслө булырға тейеш. Әгәр ҙә айырым колхоздарҙа рас-садалар әле ул кәскә етмәгән булһалар, ултыртыу срогына тиклем ҡалған 12—15 көн ваҡыттан файҙаланып, уларға азот һәм фосфор ашламалары менән хәҙер һис кисекмәҫтән өҫтәмә ашлама бирергә кә-рәк.

Рассадаларҙы парниктарҙан ергә күсе-реп ултыртыр өсөн болотло көндәр һайла-на. Әгәр ҙә һауа ҡыҙыу булһа, төш ауышҡас ҡына рассадаларҙы ултырта башлап, ул эште ҡараңғы төшкәнсе дауам иттерергә кәрәк. Сөнки көндең ҡыҙыу сәғәттәрендә ултыртҡанда рассадаларҙың тамырланыуы ҡәсә насарая.

Парниктарҙан рассадаларҙы күсереп ул-тыртҡанда ҡояш һәм елдәрҙән киптермәҫ өсөн уларҙы махсус корзинкаларҙа генә йөрөтәләр, тамырҙарына мул итеп һыу һибәләр. Алдан маркер менән билдәләнгән урынға рассаданы ғәҙәттә парникта ул-тырғанға ҡарағанда, 3-4 сантиметр тә-рәнерәк итеп ултыртырға һәм шунда уҡ һәр үҫемлеккә бер литр иҫәбенән һыу һибергә, өҫтөнән ҡоро тупраҡ менән ҡап-лап ҡуйырға кәрәк.

Әгәр ҙә колхоз, үҙендә помидор расса-даһы етештермәү сәбәпле, уны ситтән һатып алһа, мөмкин тиклем, «Бизон», «Эрлиана», «Пьереста», «Маяҡ» кеүек, иртә етешә торған сортлы рассадалар алырға тейеш. Был бигерәк тә республи-кабыҙҙың төньяҡ райондары өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Ләкин расса-даларҙы йөрөтеү өсөн йәшник һәм кәр-зинкәләрҙе алдан әҙерләү шарт.

Помидор рассадаларын баҡсаға күсереп ултыртҡас, урожай өсөн көрәштең яңы осоро башлана. Уның рәт араларында, шулай уҡ рәт эсендәге айырым үҫемлек араларында тупраҡ һәр 10—15 көн һа-йын йомшартып торола. Алдынғыларҙың тәжрибәләренә ҡарағанда, һәр йомшар-тыу урожайҙы 8-9 процентҡа күтәрә. Помидор емештәренең үҙ һабаҡтарында ҡыҙарып бешеүҙәре өсөн, рассадаларға күсереп ултыртыуҙан һуң 12—15 көн уҙғас, улар суперфосфат һәм азот менән өҫтәмә аҙыҡландырыла. Ә инде тағы 2 аҙна уҙғас, суперфосфат менән өҫтәмә аҙыҡландырыла. Ямғырҙар сәбәпле ер еүеш булһа, ашламалар ҡоро хәлендә ер-гә һибелә һәм тупраҡ менән ҡаплана. Ләкин тупраҡ ҡоро булһа, ашлама шы-йыҡ рәүештә индерелә.

Беҙҙең тәбиғи шарттарҙа помидор үҫем-легендә бер генә һабаҡ ҡалдырып, уның шытып сыҡҡан ботаҡ һабаҡтары өҙөп ташлап барыла. Үҫемлектә инде 3-4 емеш хасил булғас та, уның осо еңелсә генә ҡырҡып сығыла. Был ҡағиҙәләрҙе ҡул-ланыу, урожайҙы күтәреү менән бер үк ваҡытта, уның иртә етешеүен дә тәьмин итә.

Агротехниканы еренә еткереп тәрбиә-ләгәндә, помидор һәр гектарынан аҙ ти-гәндә 450—500 центнер урожай бирә. Алдынғылар һәр гектарҙан 1600 центнер урожай үҫтереп алалар. Ләкин беҙҙең рес-публикабыҙҙың айырым колхозларында помидор урожайы һәр гектарҙан 50—60 центнер самаһы ғына алына.

Помидор ҡиммәтле культура ул. Уның колхоздарҙа ҙур доход килтереүен күҙҙә тотоп, беҙ быйыл юғары урожай өсөн кө-рәште киң йәйелдерергә тейешбеҙ.

Агроном А. Әхмәров.

Башҡорт АССР-ы колхоздарында яҙғы баҫыу эштәре барышы

(План үтәлеше, 1951 йылдың 1 июненә, процентарҙа).

Тотҡан урыны	Районлар	Бөтә яҙғы культуралар сәселгән	Мал азыҡ культуралары сәселгән	Пар һөрөлгән	Тотҡан урыны	Районлар	Бөтә яҙғы культуралар сәселгән	Мал азыҡ культуралары сәселгән	Пар һөрөлгән
1	Хәйбулла	106	91	37	34	Архангель	94,8	84	26
2	Баймаҡ	104	100	55	35	Мәләүез	94,8	75	22
3	Әбйәлил	102,3	79	55	36	Дыуан	94,6	77	29
4	Учалы	102,2	57	15	37	Ауырғазы	94,5	79	41
5	Шаран	101,5	100	62	38	Туймазы	94,3	108	93
6	Йомағужа	101,3	135	76	39	Бәләбәй	93,4	76	47
7	Матрай	101,1	56	24	40	Воскресен	93,3	71	25
8	Ҡыйғы	100,8	60	33	41	Бишбүләк	93,2	88	21
9	Миәкә	100,4	102	32	42	Мәсетле	93,2	74	19
10	Стәрлетамаҡ	100,4	69	58	43	Баҡалы	93,1	117	52
11	Зианчура	100,3	100	31	44	Бөрөй	93	81	41
12	Бүздәк	100,1	77	71	45	Кейөргәҙе	92,5	69	37
13	Абзан	100,1	52	21	46	Өфө	92,3	85	98
14	Бөрйән	99,9	100	—	47	Кушнаренко	91,9	61	22
15	Белорет	99,3	30	45	48	Пәрмәкәй	91,9	88	55
16	Саҡмағош	99,2	106	40	49	Бәләбәй	91,9	90	48
17	Благовар	99	102	53	50	Дүртөйлө	91,4	62	65
18	Салауат	98,1	52	28	51	Тәтешле	91,3	69	61
19	Әлшәй	98	92	50	52	Ҡалтасы	91,2	73	45
20	Балтач	97,3	73	48	53	Нуриман	90,9	76	61
21	Бәрә	97,2	66	64	54	Краснокам	90,7	62	56
22	Белокатай	97	56	27	55	Мишкә	89,1	72	55
23	Дәүләкән	97	92	63	56	Яңауыл	89,1	76	70
24	Ҡырмыҫҡалы	96,8	78	33	57	Благовещен	86,5	69	61
25	Стәрлебаш	96,8	94	33	58	Покровка	85,3	66	39
26	Шишмә	96	83	60	59	Ҡариҙел	82,9	50	38
27	Федоровка	96	85	20	60	Иглин	82,5	71	54
28	Ғафури	95,8	68	43	61	Аскын	81,5	84	48
29	Маҡар	95,7	67	81	62	Байҡыбаш	81,2	72	61
30	Йылайыр	95,6	33	3	63	Оло Тәләк	72	71	59
31	Ҡаңҙра	95,4	105	79	64	Октябрьский ҡалаһы	83,6	165	58
32	Илеш	95,1	68	40					
33	Күгәрсен	95	56	48					

Эшселәр клубы—культура-ағартыу эштәренең үҙәге

Һүрәттә: Черниковск ҡалаһының «Ударник» клубы эргәһендәге башҡорт йыр һәм бейеү ансамбле татар бейеүен башҡара. А. Шәмшиев фотоһы.

Черниковск ҡалаһының предприятие-ләрендә һәм төҙөлөш трестарында хәҙер 16 эшселәр клубы эшләй. Улар хеҙмәт-сәндәр араһында культура-ағартыу һәм политик-массовый эш ойошторалар.

Ҡала клубтары эргәһендә 196 художество-лы үҙ эшмәкәрлек түңәрәге ойошто-ролған. Уларҙың эшендә ике мең ярымға яҡын кеше ҡатнаша. Клубтарҙа [illegible] темаларға лекциялар, докладтар, ял кисә-ләре һәм башҡалар уҙғарыла.

Мәҫәлән, Черниковскиҙағы «Ударник» клубы күптән инде культура уҙағына әйләнде.

Клубтың эше менән правление етәксе-лек итә. Уның лекцион пропаганда, ху-дожестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәре, физкультура-спорт, балалар араһында эшләү буйынса секциялары бар. Шулай уҡ правление эргәһендә художество сове-те эшләй.

Масса араһында политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу «Ударник» клубы правлениеһенең иғтибар үҙәгендә тора. [illegible]

М. Мостафин.

ФЕЛЬЕТОН

Хәҙерге замандың унтер Пришибеевы Мурзин

Унтер Пришибеев суд залында үҙенең кешеләрҙе мәсхәрә итеүҙә, тәртип боҙоу-ҙа ғәйепләнеүе тураһында ишеткәс, тәрән ғәжәпкә ҡала һәм мировой судьяға былай тип яуап ҡайтара:

— ...Тимәк, һәр төрлө хәл бергәләп башҡарыла тип аттестацияларға закон-дың бөтә статьялары буйынса мөмкин бу-лып сыға. Ғәйепле кеше мин түгел, ә барлыҡ башҡа кешеләр..., ти ул.

Әбйәлил районы прокуроры иптәш Мурзин ауыҙынан да тап шуға оҡшашлы һүҙҙәрҙе бик йыш ишетергә тура килә. Мин күрәм, һеҙҙе был хәл ғәжәпкә ҡал-дыра. Чехов заманында йәшәгән самодур Пришибеев менән, бөгөн беҙҙең совет за-манында йәшәгән район прокуроры ара-һында нисек бәйләнеш булыуы мөмкин һуң, тип әйтмәксе булаһығыҙ һеҙ.

Гениаль художник тыуҙырған үлемһеҙ образдың беҙҙең көндәрҙә лә ҡайһы бер район прокурорына ҙур оҡшашлыҡ һаҡ-лап алыуы бик күптәрҙе таң ҡалдыр-ҙы. Сөнки ул районда закондар үтәлеүен күҙәтеүсе, тәртип һаҡлаусы беренсе ке-ше. Шулай булғас, прокурор бөтә башҡа кешеләргә ҡарағанда ла, общественный эштә иң әҙәпле, мораль йәһәттән керһеҙ, таҙа кеше булырға тейешле ине.

Әбйәлил прокуроры иптәш Мурзин да эштең, тормоштоң формаль яғы менән шулай. Прокурор булырға тырыша, әл-биттә. Унда закон башында торған кеше-ләргә хас ғорурлыҡ һәм мәһәбәтлек кү-рәһен. Кешеләр менән дә ул үҙенә нисек оҡшай, шундай тон менән һөйләшә белә.

Ә эшкә килгәндә инде күҙ алдына бө-төнләй икенсе картина килеп баҫа. Про-курор үҙ билдеге менән тупаҫ рәүештә совет закондарын боҙа. Сталинсә Консти-туция менән бирелгән совет кешеһенең хоҡуҡына оятһыҙ рәүештә хыянат итә. Бындай факттар Әбйәлил прокуратура-һында уңайлап һаналалар. Суд практика-һында процессуаль кодексты боҙоуҙар бында тағы ла күберәк.

Сөнки, Мурзин бик күп мәсьәләләрҙе үҙенең шәхси интересынан сығып хәл итергә ярата. Мәҫәлән, ул Кусимә ОРС склады мөдире булып эшләүсе ҙур рас-тратчик Полуэктовтан башта ришвәт (взятка) алды, һуңынан үҙен яуапҡа тарт-тырҙы.

Прокуратурала конюх булып эшләүсе Сәйфетдинов Хәлилдән баҙарға сығарып, прокуратура бесәнен һаттырҙы. Һуңынан уҙ кесәһенә аҡса аҙыраҡ инген өсөн, Сәйфетдиновты прокуратура бесәнен ур-лауҙа ғәйепләп, яуапҡа тарттырҙы.

Унтер Пришибеев әйтмешләй прокурор Мурзинсә «...һәр төрлө хәл бергәләп баш-ҡарыла тип аттестацияларға закондың бөтә статьялары буйынса мөмкин булып сыға» ағыры.

Ул аҡса түләмәйенсә генә алып эсел-гән ярты һауыт араҡының хаҡын һорап йонсотҡан өсөн, Аскар үҙәк аҙыҡ мага-зины Әхмәтдиновты «Совет сауҙаһы тәр-типтәрен боҙған өсөн» тип, эшенән ал-дырта, суд яуаплылығына тарттырырға уйлай.

Ошо маҡсатта прокурор үҙ ҡулдары менән көпә-көндөҙ эшләп торған магазин-ға пломба һалып китә, сельпо работник-тәрен магазинде икенсе кешегә тапшыр-тырға мәжбүр итә.

Әҙәпле сельпо етәкселәре самодур про-курор ихтыярына буйһонop, магазинде әлек растрата яһап сыҡҡан Ғималоваға тапшырырға ашығалар. Эш барышында был хәл менән бөтә район партия, совет ойошмалары шөғөлләнергә мәжбүр була-лар. Бер нисә сәғәттән Ғималоваға мага-зинде кире Әхмәтдиновҡа тапшырырға тура килә.

Ошо «ҡатмарлы» сәбәптәр арҡаһында район магазины дүрт көн буйына ябыҡ торҙо.

Әбйәлил прокуроры ҡайһы бер мәсьә-ләләрҙә унтер Пришибеевтан да арттырып ебәрә. Унтер Пришибеев насармы-яҡшы-мы ауылда тәртип һаҡларға тырышҡан. Ә прокурор Мурзин тәртипте үҙе боҙа. Мә-ҫәлән, ул районның Кусим колхозынан 530 һумға ат һатып ала. Был атты шул уҡ колхоз иҫәбенән ашатып һимертә, һәм һуйып, итен баҙарға сығарып һатып, үҙенә меңдәрсә һум файҙа килтерә.

Ә ҡатын-ҡыҙ менән шаярыу Мурзинсә ғөмүмән тәртип боҙоуға инмәй. О, юҡ, ул башҡаларҙы былай шаярыуҙар өсөн бик тиҙ яуапҡа тарттыра белә. Бына үҙе ин-де ҡатын-ҡыҙ менән күңел теләһә шул тиклем шаяра ала.

Тик шуныһы ҡыҙғаныс, ни өсөндөр район хеҙмәтсәндәре уның был закон бо-ҙоуҙарына оҙаҡ ваҡыттар буйына юл ҡуйып килгәндәр. Хәйер уларға ла үпкә юҡ инде. Мурзин тураһында Башпроку-ратурала сигналдар аҙ булдылармы ни? Ни өсөндәр ошо сигналдар буйынса ошо көнгә тиклем конкрет сара күреүсе юҡ?

Ә прокурор Мурзин былай саҡтарҙа ул тап Унтер Пришибеев һымаҡ поҙаға инеп:

— Әбйәлил районында ғәйепле кеше мин түгел, барлыҡ башҡа кешеләр..., ти.

М. Алан.

Иран Мәжлесендә

Ирандың премьер-министре Мосаддыктың сығышы

ТЕГЕРАН, 1 июнь. (ТАСС). Мәжлестең 31 майҙа булған ябыҡ ултырышында Иран премьер-министре Мосаддык үҙе ме-нән АҠШ һәм Англия посолдары ара-һында булған осрашыу тураһында хәбәр итте.

«Журналь де Тегеран» газетаһының 1 июнда хәбәр итеүенә ҡарағанда, Мосад-дык Мәжлес депутаттарына «нефть про-мышленносен национализациялау тура-һындағы законды тормошҡа ашырыу кә-рәклеген посолдарға аңлатыуы» тураһын-да белдергән, һәм, «илдә хакимлек иткән пауперизм һәм экономик хөйерселеккә ҡаршы көрәш өсөн беҙгә үҙебеҙҙең тәби-ғи байлыҡтарыбыҙҙы эксплуатациялау-ҙан максимум доход алырға кәрәк. Мин, Тегеранда 20 меңдән артығыраҡ хәйерсе бар һәм уларҙың нисек йәшәүе тик бер аллаға ғына билдәле, тип туранан-тура билдәләгәйнем инде», тип өҫтәгән.

«Англия миссияһының килеүенә ҡа-рата, — тигән унан ары Мосаддык, — мин посолдарға, һөйләшеүҙәр программа-һы беҙгә билдәле булмау айҡанлы, беҙ бындай миссияның килеүе өсөн риҙалыҡ бирә алмайбыҙ, тип белдерҙем. Берләш-кән комиссияның (Ирандың нефть про-мышленносен национализациялау тура-һындағы законды тормошҡа ашырыу бу-йынса — редакция иҫкәрмәһе) риҙалы-ғын алыу өсөн һәм һөйләшеүҙәр про-граммаһын ентекле өйрәнеп, национали-зациялау тураһындағы законға ярашлы рәүештә Англия миссияһының килеүенә беҙҙең риҙалыҡ бирә алыуыбыҙ өсөн башта һөйләшеүҙәрҙең характеры һәм йөкмәткеһе тураһында беҙгә хәбәр [...] лергә тейеш.

Бынан тыш, беҙҙең национал[...] тураһындағы законды тормошҡа [...] рыуҙан башҡа бурысыбыҙ юҡ [...] һөйләшеүҙәрҙе тик беҙҙең нефт[...] ға ҡағылған закондың статья[...] на ярашлы рәүештә генә башл[...] быҙ».

«Нефть мәсьәләһен хәл [...] премьер-министрға хәрәкәт [...] рергә кәрәк», тип белдергә[...] Эмамиҙең сығышынан һуң, М[...] «Һеҙ хәҙер законды бер тауыш[...] лаһығыҙ, уны минең ҡулыма [...] һәм мин уны үтәйәсәкмен», тип[...].

«Толу» газетаһы премьер-мини[...] саддыктың сығышына ҡағылы[...] посолынан иртәгә аша Велик[...] ния посолы Мосаддыктан нацио[...] циялау тураһындағы законға үҙгә[...] индереүҙе һораған, тип яҙа.

Газетаның унан ары күрһәтеүе[...] рағанда, премьер-министр, Англи[...] эшлә яуап биргәндә мин, «закон[...] кәй генә үҙгәрештәр ҙә индереүгә [...] ҡым юҡ, ләкин эш тупикҡа [...] рәлһә, Мәжлес икенсе проект [...] хоҡуҡлы», тип белдерҙем, тип М[...] депутаттарына хәбәр иткән.

Газета, Мосаддык был белдереүҙә[...] ғас, Мәжлес ултырышы дауылды [...] тер алды, тип билдәләй. Бөтә тр[...] ҙан да депутаттарҙың, «беҙ закон[...] ниндәй үҙгәртеүҙәр индерергә [...] майбыҙ!» тигән тауыштары ишетел[...].

Дунай—Ҡара диңгеҙ каналын төҙөү тураһында Англия газетаһының хәбәрсеһе

ЛОНДОН, 1 июнь. (ТАСС). «Дейли уор-кер» газетаһының хәбәрсеһе Джон Гиб-бонс, Дунай—Ҡара диңгеҙ каналы төҙө-лешенә барғандан һуң, үҙенең тойғолары тураһында һөйләп, төҙөлеш эштәренең юғары механизацияланған булыуын бил-дәләй. Бындай механизация Советтәр Со-юзының Румынияға ярҙам күрһәтеүе ар-ҡаһында ғына мөмкин булды.

«Тап бына совет оборудованиеһе арҡа-һында, — тип яҙа хәбәрсе, — каналдың ер эштәрендә ҡул хеҙмәте ҡулланылмай, ә экскаваторҙарҙың тимер сүместоре бер юлы 3 тонна ер ҡаҙып алалар.

Нигеҙҙә колониаль эшселәрҙең ауыр хеҙмәте менән төҙөлгән Суэц һәм Панама каналдарынан айырмалы рәүештә, Румы-ниялағы Дунай—Ҡара диңгеҙ кана[...] хәҙерге ваҡытта Советтәр Союзы[...] мошҡа ашырылған бөйөк төҙөлештә[...] үек үк, кешенең эшсе үтәүе [...] тураһында социалистарҙың изге [...] тормошҡа ашырыуға бөтә бөйөк [...] ныраҡ торалар.

Дунай—Ҡара диңгеҙ каналы т[...] шеңлә миңең өсөн иң үҙәле булып [...] йыллыҡ план менән күҙҙә тотолған [...] Дон һәм Волгалағы күреҫле төҙөле[...] ҙә мин күҙәткән ярыш һәм [...] рухының, беренсе класлы совет т[...] һы, электр экскаваторҙары, ашы [...] тимер юл вагонеткалары һәм [...] һында йөк автомашиналары мен[...] кәнбайышҡа ла таралыуы тора».

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 1 июнь. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ ар-мияһының баш командованиеһе 1 июнда, бөтә фронттарҙа ла Халҡ армияһының частәре Ҡытай добровлецтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, 38-се параллел-дән төньяҡҡараҡ Америка-Англия интер-венционистик ғәскәрҙәренең контратака-ларын уңышлы кире ҡағалар һәм уға йәнле көстә, техникала ҙур [...] яһайҙар, тип хәбәр итте.

1 июнда һауа һуғыштарында [...] мияһының авиацияһы Америк[...] «В—29» маркалы бер бомбардир[...] атып төшөрҙө. Самолеттарға атыусы [...] локтар-истребителдәр дошмандың 3 [...] летын атып төшөрҙөләр.

Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Шанхайҙа 3.828.431 кеше ҡул ҡуйған

ШАНХАЙ, 1 июнь. (ТАСС). «Шанхай ньюс» газетаһы, 20 апрелдән 31 майға тиклем Шанхайҙың 3.828.431 кешеһе, йәки ҡалала йәшәгән бөтә халҡтың 76 проценте Тыныслыҡ Пакты төҙө[...] һындағы талапҡа ҡул ҡуйҙы һә[...] нияны ремилитаризациялауға ҡарш[...] уыш бирҙе, тип хәбәр итте.

Балаларҙы яҡлауҙың Халыҡ-ара көнө хөрмәтенә Польшала премиялар булдырыу

ВАРШАВА, 1 июнь. (ТАСС). Польша республикаһының министрҙар советы пред-седателе Циранкевич, культура һәм ис-кусство министрының тәҡдиме буйынса, балаларҙы яҡлауҙың Халыҡ-ара көнө хөр-мәтенә балаларға һәм йәштәргә арналған иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн һәр береһе 1[...] злотых суммала ике премия булд[...]

Премиялар йыл һайын әҙәбият, [...] һәм театр искусствоһы, музыка һ[...] нематография өлкәһендәге иң яҡшы [...] ҙәр өсөн 1 июнда бирелеәсәктәр.

Беренсе премиялар быйыл бирел[...]

Совет Армияһы хөрмәтенә Софияла монумент

СОФИЯ, 1 июнь. (ТАСС). Болгарияны азат итеүсе Совет Армияһы хөрмәтенә мону-мент проектын эшләү өсөн конкурс та-мамланды. Архитектор Данко Митров етәк-селегендәге коллектив эшләгән проект[...] геҙ итеп алынды. Ул Софияның [...] Сентябрьйче паркында ҡуйыласаҡ.

Редактор F. F. FAFAP[...]

РСФСР Төҙөлөш материалдары промышленносе министерствоһының

ӨФӨ ИНДУСТРИАЛЬ ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 уҡыу йылына беренсе һәм өлкән курстарға уҡыусылар ҡабул итә.

Техникум керамика технологияһы буйынса техниктар әҙерләй.

Уҡыу срогы 4 йыл.

Ҡабул итеү һынауҙары техникумдар өсөн булған дөйөм тәртиптә.

Түбәндәге адреска мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Достоевский ура[...] 138-се номерлы йорт.

Дирекция.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Рус драма театрында — Луначарский исемендәге бәксала — иртән «ЛУТОНИН-ДӘР СЕМЬЯҺЫ», кис «ТОРМОШ ӨСӨН КӨРӘШ». Иртәнге спектакль көндөҙгө 12 сәғәттә, кис—8 сәғәт 30 минутта баш-лана.

«Октябрҙә»—«БУЙҺОНМАҒАН ҠАЛА».

«Салауатта» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘА-РЫ».

«Уралда» — «БУЙҺОНМАҒАН ҠАЛА».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «МӘСКӘҮҘӘН АЛЫҪТА».

Рус драма театры бинаһында —[...] АССР-ының атҡаҙанған артистары [...] **сонов** һәм **Р. Вәлиеватең** Татар[...] Р. Туҡай исемендәге филармони[...] листәре ҡатнашлығында концерт.

Башлана кис 9 сәғәттә.

Башҡорт государство опера һә[...] театрында — иртән «СЫҢРАУ [...] НА», кис «КӘҘО һәм КОТӘ». [...] спектакль 12 сәғәттә, киске спект[...] сәғәт 30 минутта башлана.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

Б04317 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№ 109(8826)
1951 йыл
5
ИЮНЬ
шишәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

1951 ЙЫЛ ПЛАНЫН СРОГЫНАН АЛДА ҮТӘҮ ӨСӨН СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШТЫ КИҢ ЙӘЙЕЛДЕРӘЙЕК! Производство стахановсылары һәм новаторҙары ҡала йыйылышының Өфө ҡалаһы предприятиеләренең бөтә эшсеәренә, инженер-техник работниктарына һәм хеҙмәткәрҙәренә мөрәжәғәте (1-се бит).

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА (1-се бит).

Башҡорт АССР-ының Стәрлетамаҡ районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, машина-трактор станциялары һәм совхоз работниктарының, ауыл хужалығы специалистарының йөкләмәһе (2-се бит).

Культура-ағартыу учреждениелары работниктарының ҡала йыйылышы (2-се бит).

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ АЛДЫНҒЫЛАРЫНДА. Общественный хужалыҡты артабан үҫтереү өсөн (2-се бит).

- Христо Ботев (3-сө бит).

Тибет (3-сө бит).

Редакцияға хат (3-сө бит).

Г. Герäев. — Эске резервтарҙы файҙаланыу иҫәбенә (3-сө бит).

КОЛХОЗ АУЫЛЫНДА. И. Ниғмәтуллин. —Сәсеү тамамланғас (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһы

Бөгөн, Өфө ҡалаһында Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһы асыла. Хеҙмәтсәндәрҙең ышанысын ҡаҙанған депутаттар — халыҡ вәкилдәре республикабыҙҙың юғары власть органында Совет Башҡортостанының экономикаһын, культураһын артабан сәскә аттырыуға йүнәлдерелгән мөһим государство әһәмиәтендәге саралары тикшерәсәктәр һәм ҡабул итәсәктәр.

1951 йылдың 18 февралендә Башҡорт АССР-ы Верховный Советына депутаттар һайлау республика хеҙмәтсәндәренең сикһеҙ юғары активлығында үтте. Коммунистар менән партияһыҙҙарҙың сталинсе блогы кандидаттары өсөн бөтә һайлаусыларҙың 99,99 проценты тауыш бирҙе. Башҡортостан эшсәндәре үҙ республикаһының юғары органына иң алдынғы кешеләрҙе, промышленность һәм ауыл хужалығы новаторҙарын, алдынғы фән һәм культура деятелдәрен, Ленин — Сталин тибындағы государство етәкселәрен һайланылар. Коммунистар менән партияһыҙҙар блогы кандидаттары өсөн тауыш биреп, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре, бөтә совет халҡы менән бергә, үҙҙәренең мораль-политик берҙәмлектәрен, Ленин — Сталин партияһы эшенә, илебеҙҙә коммунизм төҙөү эшенә аҙағына тиклем бирелгәнлектәрен демонстрацияланылар.

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы — Россия Федерацияһы составында тиң хоҡуҡлы, алдынғы республика. Ул Совет власе йылдарында большевиктар партияһы етәкселегендә, бөйөк рус халҡының туғандарса ярҙамында илебеҙҙең ҡеүәтле индустриаль районларының береһе, нефть республикаһы булып әүерелде. Башҡорт халҡының формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураһы сәскә ата.

Дөрөҫ милли политика арҡаһында, ти иптәш Сталин, Совет власы «Россия окраиналарының иң ҡараңғы төпкөлдәренә юл һала алды, иң артта ҡалған һәм милләт яғынан бик күп төрлө булған массаларҙы политик тормошҡа күтәрҙе, был массаларҙы үҙен менән бик күп төрлө йептәр аша бәйләне — бындай бурысты донъяла бер генә хөкүмәт тә хәл итә алманы ғына түгел, ә хатта үҙ алдына ҡуйманы ла (ҡуйырға ҡурҡтылар!)».

Большевиктар партияһының ленинсе-сталинсе милли политикаһы арҡаһында башҡорт халҡы үҙенең государственносын барлыҡҡа килтерҙе, үҙенең элекке хужалыҡ, политик һәм культура артталығын бөтөрҙе, социалистик милләт булып ойошто. Республикабыҙҙа нефть промышленносе, металлургия, машиналар, станоктар төҙөү, химия, электротехника һәм промышленностең башҡа бик күп тармаҡтары алға киттеләр. Алдынғы техника менән бай ҡоралландырылған республикабыҙҙың социалистик ауыл хужалығы йылдан-йыл ҡыҙыуыраҡ темптар менән алға бара. Ауыл хужалығында төп бурыс — малсылыҡты күтәреү бурысы уңышлы хәл ителә, тәбиғәтте үҙгәртеүҙең сталинсе планы срогынан алда тормошҡа ашырыла.

Совет Башҡортостаны — Автономиялы Совет Социалистик Республика. Башҡорт халҡының государственносе — ул Бөйөк Октябрь революцияһының емеше. Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте, иптәш Сталин башҡорт халҡына государственность бирҙеләр. Башҡортостан халҡы үҙ республикаһының Верховный Советына үҙ вәкилдәрен һайланы. Социализм илеҙең Сталинсе Конституцияһы үҙе донъяла иң демократик һайлау законы нигеҙендә Верховный Советҡа халыҡтың алдынғы вәкилдәрен һайларға, Советтарҙың эшендә даими ҡатнашырға, государство менән идара итергә тулы мөмкинлек бирҙе.

Совет Башҡортостаны — ул күп милләтле республика. Унда башҡорттар менән бергә рустар ҙа, татарҙар ҙа, сыуаштар ҙа, украиндар ҙа, марийҙар ҙа бер семья булып, дуҫ һәм туғандаш берҙәмлектә йәшәйҙәр. Совет халыҡтарының дуҫлығы беҙҙең Тыуған илебеҙҙең сәскә атыуының һәм еңелмәҫлегенең залогы ул.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһы республика хеҙмәтсәндәренең производство һәм политик активлеге тайәт юғары күтәрелгән шарттарҙа асыла. Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре, бөтә совет халҡы менән бергә, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың бөйөк программаларын уңышлы тамамлап, коммунистик төҙөлештең яңы уңыштары өсөн фиҙаҡәр көрәшә. Башҡортостан халҡы, бөтә совет кешеләре кеүек, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре заказдарын срогынан алда үтәү өсөн, промышленноста һәм ауыл хужалығында яңы өлгәшеүҙәр яулап алыу өсөн көрәшәләр.

Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре араһында социалистик ярыш көндән-көн киңерәк ҡолас ала. Күптән түгел Башҡортостан нефтселәре бөйөк Сталинға хат яҙып, 1951 йылғы производство заданиеларын срогынан алда арттырып үтәргә йөкләмә алдылар һәм Әзербайжан, Куйбышев нефтселәрен социалистик ярышҡа саҡырҙылар. Ошо көндәрҙә республикабыҙҙың Дәүләкән районы колхозсылары, МТС һәм совхоз эшселәре, ауыл хужалығы специалистары республика игенселәрен социалистик ярышҡа саҡырып сығыш яһанылар һәм 1951 йылда уражайҙы тағы ла юғарыраҡ күтәрергә, малсылыҡтың продукт биреүсәнлеген арттырырға йөкләмә алдылар. Ә газетабыҙҙың бөгөнгө номерында Өфө ҡалаһының производство стахановсыларының һәм новаторҙарының ҡалалағы бөтә предприятиеләрҙең эшселәренә, инженер-техник работниктарына һәм хеҙмәтсәндәренә Мөрәжәғәте баҫылып сыҡты. Өфө ҡалаһының стахановсылары ҡаланың бөтә предприятие коллективтарын 1951 йылғы государство планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылырға саҡыралар. Улар эшселәрҙе һәм инженер-техник работниктарҙы продукцияның сифатын яҡшыртыу, үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн техниканы һәм тиҙ эшләү ысулдарын яҡшыраҡ файҙаланырға, алдынғы стахановсыларҙың тәжрибәһен массовый өйрәнергә һәм киң таратырға, коллектив стахановсы хеҙмәткә күсергә саҡыралар.

Өфө стахановсыларының һәм новаторҙарының был патриотик башланғысы, шикһеҙ, Өфө ҡалаһында ғына түгел, ә бөтә республикалағы промышленность предприятиеләрендә ҡайнар отклик табасаҡ.

Совет кешеләре ижади хеҙмәт дәрте менән тулы. Беҙҙең бөтә илебеҙҙә совет эшсәндәре тыныслыҡ өсөн хеҙмәт итәләр, социалистик Ватаныбыҙҙың экономик һәм политик ҡеүәтен тағы ла юғарыраҡ күтәреү өсөн, илебеҙгә күберәк нефть, металл, күмер, иген биреү өсөн көрәшәләр. Совет кешеләренең был ижади тыныс хеҙмәте бөтә донъяла ныҡлы тыныслыҡ өсөн сикһеҙ ҙур вклад буласаҡ, илебеҙҙе коммунизмдең яңынан-яңы еңеүҙәренә алып киләсәк.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының депутаттарына, халыҡ бәхете өсөн, коммунизмдең еңеүе өсөн уларҙың изге эштәрендә уңыштар теләйбеҙ.

1951 йыл планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерәйек!

Производство стахановсылары һәм новаторҙары ҡала йыйылышының Өфө ҡалаһы предприятиеләренең бөтә эшселәренә, инженер-техник работниктарына һәм хеҙмәткәрҙәренә

МӨРӘЖӘҒӘТЕ

Ҡәҙерле иптәштәр!

Совет халҡы Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә коммунистик төҙөлештең бөйөк бурыстарын уңышлы үтәй. Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ срогынан алда — дүрт йыл өс айҙа тамамланды, коммунизм юлында яңы аҙым яһалды.

Коммунизмға табан юлда илебеҙҙең тарихи уңыштарына өлгәшеүҙә ҡеүәтле хәрәкәт иттергес көс булып бөтә халыҡ социалистик ярышы тора.

Ҡалабыҙҙың промышленность, транспорт предприятиеләрендәге һәм төҙөлештәрендәге был ярыш барышында производствоның меңәрләгән иң яҡшы стахановсылары һәм новаторҙары үҫеп сыҡтылар, улар үҙҙәренең фиҙаҡәр хеҙмәттәре менән биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү эшенә баһа биреп бөтөргөһөҙ вклад индерҙеләр. 4 меңдән артыҡ стахановсы биш йыллыҡта икешәр һәм өсәр биш йыллыҡ норма үтәнеләр.

Ҡаланың предприятиеләрендә производство планын срогынан алда үтәү өсөн көрәштә эшселәрҙең, мастерҙарҙың, инженерҙарҙың һәм техниктарҙың ижади инициативаһы өҙлөкһөҙ үҫә. Эште коллектив стахановса ойоштороу һәм станоктарҙы һәм механизмдарҙы тулыһынса файҙаланыу өсөн, отличн сифатлы продукция етештереү өсөн Александр Чутких, сырьё һәм материалдарға комплекслы экономия яһау өсөн Лидия Корабельникова, хеҙмәттең алдынғы стахановсы методтарын производствоға массовый индереү өсөн инженер Ковалев һәм мастер Российский артынан эйәреүселәр һаны көндән-көн арта бара.

Хәҙер айырым эшселәр генә түгел, ә производство цехтары һәм участкалары коллективтары тотошо менән стахановсы эш юлына баҫалар. Быларҙың бөтәһе лә ҡаланың промышленносына һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәүҙе тамамларға һәм 1951 йылдың тәүге дүрт айлыҡ производство планын уңышлы үтәргә мөмкинлек бирҙе.

Ләкин ҡала промышленносының, транспортының һәм төҙөлештәренең эшендә серьез етешһеҙлектәр урын алып тороуҙы дауам итәләр. Беҙҙә производствоны өҙлөкһөҙ үҫтереү өсөн файҙаланылмаған резервтар күп әле.

Ҡайһы бер предприятиелар государство планын үтәй алмайҙар, продукцияны билдәләнгән ассортиментта етештермәйҙәр, ритмһыҙ һәм түбән сифатлы күрһәткестәр менән эшләйҙәр.

Ҡайһы бер предприятиеләрҙә, стахановсыларҙың күп һанда булыуы менән бергә, нормаларын үтәй алмаусы эшселәр ҙә бар.

Социалистик ярышты ойоштороуҙы формализм элементтары әле бөтөрелмәгән, ярышыусыларға үҙҙәренең алған йөкләмәләрен үтәүҙә тейешле ярҙам күрһәтелмәй, ҡайһы бер ваҡиғаларҙа иң яҡшы стахановсыларҙың тәжрибәләре йомшаҡ өйрәнелә һәм таратыла, сырьёларҙы, материалдарҙы, электр энергияһын экономиялы тотоноу һәм отлично сифатлы продукция етештереү өсөн көрәш стерлек тиклем йәйелдерелмәй.

Быларҙың бөтәһе лә хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреүҙең һәм продукция етештереүҙе арттырыуҙың бик ҙур резервтары барлығын күрһәтәләр.

Иптәштәр!

Ағымдағы йылда, беҙҙең Тыуған илебеҙ Волгала, Днепрҙа, Донда һәм Аму-Дарьяла грандиоз гидроэлектростанциялар һәм каналдар — сталинсе эпоханың бөйөк ҡоролмаларын төҙөгән ваҡытта, совет халҡы алдында бик ҙур әһәмиәттәге яңы бурыстар тора. Килеп тыуған был яңы бурыстарҙы үтәп сығыу өсөн беҙҙең эшебеҙҙәге булған етешһеҙлектәргә ҡырҡа көрәш иғлан итергә кәрәк.

Беҙ ҡаланың бөтә промышленность, транспорт һәм төҙөлеш предприятиелары коллективтарын 1951 йылдың государство планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылырға саҡырабыҙ. Етештерелә торған продукцияның сифатын күтәреү, үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, техниканы һәм эштең тиҙләтелгән методтарын яҡшы файҙаланыу, алдынғы стахановсы тәжрибәләрҙе массовый өйрәнеү һәм таратыу һәм коллектив стахановсы хеҙмәттең айырым бригадаларынан һәм цехтарынан коллектив стахановсы предприятиеға күсеү өсөн ярышты тағы ла киңерәк йәйелдерәйек.

Беҙ тимер юлы һәм һыу юлы транспорты работниктарын йөк ташыуҙың йыллыҡ планын срогынан алда үтәүҙе тәьмин итергә, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренә, промышленносҡа һәм ауыл хужалығына йөктәрҙе өҙлөкһөҙ һәм ваҡытында илтеп еткерергә, поездар һәм судноларҙың хәрәкәте графигын үтәү өсөн ярышты киң йәйелдерергә, аварияһыҙ эшләргә һәм йөктәрҙең үҙенә төшөү хаҡын бөтә сараларҙы менән кәметергә саҡырабыҙ.

Беҙ ҡаланың төҙөлеш ойошмалары работниктарын ҡаланың бөтә төҙөлештәрендә лә төҙөлеш-монтаж эштәре планын срогынан алда үтәүҙе тәьмин итергә, промышленность, культура-тормош һәм торлаҡ объекттарын үҙ ваҡытында эксплуатацияға тапшырыу буйынса заданиеларҙы һис һүҙһеҙ үтәүгә өлгәшергә, төҙөлеш эштәренең тиҙләтелгән методтарын индереү, механизмдарҙы тулыһынса файҙаланыу, төҙөлештең сифатын күтәреү һәм үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн ярыш йәйелдерергә саҡырабыҙ.

Беҙ мастерҙарҙы, техниктарҙы, инженерҙарҙы, технологтарҙы һәм конструкторҙарҙы стахановсылар һәм новаторҙар менән хеҙмәттәшлекте бөтә яҡлап нығытырға, производство технологияһын камиллаштерергә, ауыр хеҙмәт талап итеүсе процестарҙы механизациялаштырырға, эшселәрҙең квалификацияларын систематик күтәреү өсөн ныҡышмалы көрәшергә, техник пропаганданы яҡшыртырға, рационализацияны һәм уйлап табыуҙы яҡларға һәм киңәйтергә, иң яҡшы стахановсыларҙың алдынғы тәжрибәләрен өйрәнергә һәм таратырға саҡырабыҙ.

Иптәштәр!

Совет халҡы, тыныс ижади хеҙмәт менән шөғөлләнеп, тыныслыҡты һаҡлау өсөн тайпылышһыҙ көрәшә һәм яңы һуғыш утын тоҡандырыусыларҙың яуыз уйҙарын фаш итә. 1951 йылдың халыҡ хужалығы планын үтәүҙә беҙҙең алда торған бурыстарҙы уңышлы хәл итеү беҙҙең Совет государствоһының ҡеүәтен тағы ла күберәк нығытыр һәм бөтә донъяла тыныслыҡты нығытыу эшенә яңы вклад яһар.

Ленин — Сталин партияһы тирәһенә туплланған совет халҡы үҙенең бөтә көсөн Тыуған илдең сәскә атыуына бирә һәм иптәш Сталин һыҙған юлдан ышанымлы рәүештә алға — коммунизм еңеүенә бара.

Йәшәһен беҙҙең ҡеүәтле Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең бөтә еңеүҙәребеҙҙе ойоштороусы һәм рухландырыусы большевиктарҙың коммунистик партияһы!

Йәшәһен беҙҙең даһиебеҙ һәм учителебеҙ бөйөк Сталин!

Мөһим кампанияла беҙҙең хеҙмәт

Ҡара һәм төҫлө металл — илебеҙ хужалығында мөһим әһәмиәткә эйә. Уның иңдәй генә тармағын алып ҡарама, уға металл кәрәк.

Беҙҙең завод коллективы металдың әһәмиәтен яҡшы белә. Шуға күрә беҙ һуңғы ике йылда металл киҫәктәре йыйнау эшенә айырыуса ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Беҙ, заводтың бөтә эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре, быйыл металл һынығтары йыйнау буйынса ярыш ойошторҙоҡ һәм социалистик йөкләмә алдыҡ. Йөкләмәне үтәү әлбиттә, коллективтың традицияһына ингән. Беҙ алған йөкләмәбеҙҙе арттырып үтәнек. I кварталда 15,73 тонна урынына 16,1 тонна төҫлө металл һәм 105 тонна урынына 105,8 тонна тимер йыйнаныҡ.

Был эш менән заводтың административ-хужалыҡ бүлеге начальнигы иптәш А. Глушенко етәкселек итә. Металл киҫәктәре йыйнауҙа бигерәк тә Гизенгауз, Петрова, Ғиниәтуллин, Урманова, Марцкова, Волкова һәм башҡа иптәштәр ҙур активлек күрһәттеләр.

Ләкин, беҙҙә әле был серьез кампаниянан ситкә тайпылырға тырышыусы кешеләр ҙә юҡ түгел. Цех начальниктары Красиков һәм Грабовский иптәштәр металл киҫәктәре йыйнау эшендә актив ҡатнашмайҙар, бында үҙҙәрен яуаплы һанамайҙар. Был, әлбиттә, дөрөҫ түгел. Улар цехтағы металды складта тотмаһынһыҙ — төҫлө металл менән ҡара металды бергә бутайҙар. Бындай етешһеҙлектәрҙе һис һүҙһеҙ бөтөрөргә кәрәк ине.

Ә. Сәйфетдинов,

Өфө телефон аппараттары заводының техник контроль бүлеге өлкән контролеры.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Колхозсылар трассала

Мин етәкселек иткән участка юл төҙөүҙең беренсе квартал планын срогынан алда арттырып үтәне. Беҙ был ваҡыт эсендә 18 метр яңы күпер төҙөнек, 31 метр күпергә капиталь ремонт үткәрҙек, 90 кубометр төҙөү материалдары ташыныҡ. Республикала юл төҙөү айлығы иғлан ителгәс, эш темпы тағы ла күтәрелде. Минең участкала һәр көндә 250—300 кеше, 80—90 ат эшләй. Ишкар ауыл Советының М. Ғафури исемендәге колхозынан булған иптәш Асраров етәкселек иткән юл төҙөү бригадаһы коллективы айырыуса яҡшы эшләй. Был колхоздан юл төҙөү эшендә һәр көндә 15 ат, 30—40 кеше ҡатнаша, улар 31 метр оҙонлоҡта яңы күпер һәм ярты километр яңы юл төҙөнөләр. Бригада члендары Хакова, Басырова һәм Насирова иптәштәр ваҡ таш ташыуҙа көндәлек нормаларын систематик 150—160 процентҡа үтәйҙәр. Ленин исемендәге колхоз члены иптәш Тимерхановтың да ваҡ таш ташыуҙа көндәлек нормаһы 150 процент тәшкил итә.

Беҙҙең участка районда алдынғы участкаларҙан иҫәпләнә. Район Советы һәм ВКП(б) район комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы беҙҙең участкала.

Ғ. Хәмитов,

Илеш районы юл бүлегенең участка мастеры.

Һынауҙар һөҙөмтәһе

Өфө ҡалаһы Киров районы мәктәптәренең башланғыс класстарында уҡыу йылы уңышлы тамамланды.

Райондағы мәктәптәрҙең 4-се класстарында бөтәһе 1656 бала уҡып, уларҙың 1510-ы һынауҙарҙы уңышлы тапшырып, 5-се класҡа күсте. Шул иҫәптән 173 бала бөтә фәндәр буйынса ла һынауҙарҙы «отличнога» һәм 345 бала, «яҡшы» һәм «отличнога» тапшырҙы.

Райондағы алдынғы 3-сө номерлы мәктәптең маҡтаулы уҡытыусылары—педагогия өлкәһендә 30 йыл стажы булған, бай тәжрибәле иптәш Бурковская уҡытҡан 4-се «Б» һәм 22 йыл стажы булған иптәш Фролова уҡытҡан 4-се «А» класстарында уҡыусы балаларҙың бөтәһе лә бишенсе класҡа күстеләр.

Ғ. Ишрисов.

Күсмә Ҡыҙыл Байраҡ комсомолец-йәштәр бригадаһында

Бөйөргән районы Таймас МТС-ында быйыл комсомолец-йәштәрҙән бригада ойошторолғайны. Иптәш Василий Шишко етәкселек иткән был бригада коллективы сәғәт графигы менән эшләп, сәсеүҙе 8 көндә тамамларға, 10 процент яғыулыҡҡа экономия яһарға һәм сезонға һәр бер шартлы тракторға 800 гектар ер эшкәртергә социалистик йөкләмә алғайны.

Комсомолецтар алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр. Сәғәт графигы буйынса эшкә башлаған көндән үк яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Тракторсыларҙан Б. Марушко, Н. Марушко һәм В. Шишко иптәштәр сменә нормаларын көн һайын 180 процентҡа үтәп киләләр. Тик сәсеү осоронда ғына һәр бер шартлы тракторға 235 гектар ер эшкәртелде. 1084 килограмм яғыулыҡ экономия яһалды.

Хәҙерге көндә был йәш тракторсылар конбағыш һәм башҡа пропаш культураларҙың рәт араларын эшкәртәләр.

Х. Ағишев,

Таймас МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары.

Юл төҙөүҙә актив ҡатнашалар

Саҡмағош районы колхоздарында юл төҙөү һәм ремонтлау эше ҙур ойошҡанлыҡ менән бара.

Юл төҙөү буйынса бөтә участкаларҙа ла ҙур хеҙмәт күтәренкелеге йәшәй. Мастер иптәш Бәҙретдинов етәкселек иткән Саҡмағош—Шаран районларын тоташтырыусы трассаһындағы эш айырыуса уңышлы бара. Бында бөтәһе 220 кеше һәм 56 ат ҡатнашлыҡ итә. Был трассала Сталин исемендәге һәм «Үҙәк» колхоздарынан ғына ла 80 кеше һәм 15 ат эшләй.

Район юл төҙөү планын ер эштәре буйынса 180 процентҡа һәм яңы күперҙәр төҙөү буйынса ла тулыһынса үтәне лә инде.

Материалдарҙы абразив менән ҡырҡыу

ЛЕНИНГРАД, (ТАСС). Абразив тәжрибә заводының мастеры — рационализатор П. И. Бавора металдарҙы ҡырҡыу өсөн универсаль станок уйлап тапты. Ул заводтарҙар цехтарында хәҙергә тиклем ҡулланылған бөтә станоктарҙы ла—анодно-механик станоктарын гелдер бысҡыларын, механик бәләкәй бысҡыларҙы һәм башҡаларҙы алмаштырасаҡ.

Яңы станок маятник бысҡыһы принцибы менән эшләй. Унда ҡырҡыусы элемент булып минутына 1200 оборот яһаусы йоҡа ғына, ныҡ абразив диск тора. Был станок ҡырҡыу процессын, анодно-механик бысҡыға ҡарағанда, 30 тапҡыр-ға тиҙләтә, ә эш 6 тапҡырға арзаныраҡҡа төшә.

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫНЫҢ БЕРЕНСЕ СЕССИЯҺЫ АСЫЛЫУЫ ТУРАҺЫНДА

Бөгөн, 5 июнь, көндөҙгө 12 сәғәттә Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының ҙур залында Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһы асыла. (Пушкин урамы, 106, икенсе ҡатта).

БАССР Верховный Советы сессияһына килеүсе БАССР Верховный Советы депутаттарынан бер группа.

Һүрәттә (һулдан уңға): ВКП(б)-ның Борай райкомы секретары Г. С. Арсланов, Стәрлетамаҡ 4-се номерлы урта мәктәп уҡытыусыһы Т. В. Сторожина, Борай районы Молотов исемендәге колхоздың сусҡа ҡараусыһы Г. Т. Ғилмаһанова, Белорет ҡорос-сыбыҡ заводының тянульщицаһы Ф. И. Яҡупова, ВКП(б)-ның Белорет ҡала комитеты секретары З. Б. Григорьев, Яңауыл районы М. Ғафури исемендәге колхоздың күк һарыҡ үҫтереү бригадаһы бригадиры А. Сафина, 12-се номерлы тимер юлы мәктәбе уҡытыусыһы В. Н. Алфеева, Белорет металлургия заводының директоры В. М. Овчаренко иптәштәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Башҡорт АССР-ының Стәрлетамаҡ районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, машина-трактор станциялары һәм совхоз работниктәренең, ауыл хужалығы специалистәренең

ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Беҙ, Стәрлетамаҡ районы колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре, бөтә совет халыҡтары менән берлектә, беҙҙең илебеҙҙең бөйөк еңеүҙәре тураһында — СССР-ҙың дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планының дүрт йылда өс ай ваҡытта үтәлеүе тураһында шатлыҡ менән белдек. Был бөйөк өлгәшеүҙәрҙә беҙҙең хеҙмәттәребеҙҙең дә өлөшө бар.

Беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөүҙең материаль базаһын тыуҙырыу өсөн, Волгала, Донда һәм Днепрҙа, Урта Азияла һәм Ҡырымда сталинсә гигант гидро-ҡоролмаларҙы төҙөүҙе тормошҡа ашырыу өсөн беҙ үҙебеҙҙең бөтә белемебеҙҙе, көсөбеҙҙе һәм энергиябыҙҙы бирербеҙ. Һөйөклө Ватаныбыҙға күберәк аҙыҡ һәм промышленность өсөн күберәк сырьё бирербеҙ.

Украина игенселәренең өлгәһендә беҙ ауыл хужалығын артабан күтәреү өсөн социалистик ярышҡа сығабыҙ һәм үҙебеҙгә түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ.

БАҪЫУСЫЛЫҠ БУЙЫНСА

Район буйынса бөртөклө культураларҙың һәр гектарынан уртаса кәмендә 100-әр бот урожай алырға.

33 мең 400 гектар майҙандағы бойҙайҙың һәр гектарынан уртаса 110-ар бот, картофтан — 170-әр центнер, киндерҙән — 10-ар центнер, шәкәр сөгөлдөрөнән — 250-шәр центнер, йәшелсәнән — 170-әр центнер урожай алырға.

Сталин исемендәге колхоз 800 гектар майҙандағы бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан 120-шәр бот; Шевченко исемендәге ауыл хужалығы артеле 2 мең 300 гектар майҙандағы бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан 145-әр бот; Ворошилов исемендәге колхоз 3000 гектар майҙандың һәр гектарынан 120-шәр бот, ә 500 гектар участкаһының һәр гектарынан 150-шәр бот урожай алырға йөкләмә алды.

«Путь Сталина» колхозы 2570 гектар майҙандың һәр гектарынан 120-шәр, 400 гектар участкаһының һәр гектарынан 150-шәр бот; Свердлов исемендәге колхоз [illegible]000 гектар майҙандың һәр гектарынан 120-шәр, 300 гектар участкаһының һәр гектарынан 140-ар бот; Каганович исемендәге колхоз 1100 гектар майҙандың һәр гектарынан 130-ар, 170 гектар участкаһының һәр гектарынан 150-шәр бот; Киров исемендәге колхоз 1400 гектар майҙандан 120-шәр, 250 гектар участкаһының һәр гектарынан 150-шәр бот; «Новый путь» колхозы 1200 гектар майҙандан 132-шәр, 250 гектар участкаһынан 150-шәр бот; «Новая деревня» колхозы 1400 гектар майҙандан 120-шәр, 200 гектар участкаһан 180-шәр бот; Пушкин исемендәге колхоз 1680 гектар майҙандың һәр гектарынан 110-ар бот урожай алырға йөкләмә алды.

Шевченко исемендәге колхоздың 2-се номерлә баҫыусылыҡ бригадаһы (бригадиры иптәш Коваленко) 600 гектар майҙандағы бойҙай һәм һолоноң һәр гектарынан 150-шәр бот, шул уҡ колхоздың 1-се номерлә баҫыусылыҡ бригадаһы (бригадиры иптәш М. Корниенко) 550 гектар майҙандың һәр гектарынан 150-шәр бот урожай алырға һүҙ бирҙе.

Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозы 11.700 гектар майҙандағы бойҙай һәм арыштың һәр гектарынан 110-ар бот һәм 1500 гектар майҙандың һәр гектарынан 120-шәр бот урожай алырға йөкләмә алды.

Урожай йыйнауҙы һәм ашлыҡ һуғыуҙы ҡыҫҡа сроктарҙа һәм юғалтыуһыҙ үткәрәсәкбеҙ.

Игенде әҙерләүҙең государство планын 1 октябрҙән дә һуңламайынса, ә картоф, сөгөлдөр һәм йәшелсәләр тапшырыу буйынса — 1951 йылдың 15 октябренә үтәйәсәкбеҙ.

Көҙгө культураларҙың урожайлылығын артабан күтәреүҙе тәьмин итеү өсөн бөтә майҙанда пар һөрөүҙе 10 июндән дә һуңламайынса үткәрәсәкбеҙ. Парҙы йәй буйына таҙа һәм йомшаҡ хәлдә тотоу өсөн уны сиғтекле тәрбиәләүҙе ойошторасаҡбыҙ.

Көҙгө культуралар сәсеүҙе государство планын 20 августҡа юғары агротехник кимәлдә үтәйәсәкбеҙ, шул иҫәптән, бөтә майҙандың 30 процентен арҡырыбүй сәсәсәкбеҙ.

1952 йылдың бөтә яҙғы сәсеүлеге өсөн тунға һөрөүҙе 10 октябргә тамамлаясаҡбыҙ.

Социалистик ярыш нигеҙендә машина-трактор паркының етештереүсәнлеген артабан күтәреүҙе тәьмин итәсәкбеҙ, машиналарҙың буш тороуҙарын бөтөрәсәкбеҙ, запас частәрҙе, материалдарҙы, яғыулыҡты экономлы тотоноу өсөн ҡырҡа көрәш алып барасаҡбыҙ, һәр бер МТС-та трактор эштәренең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыуға өлгәшәсәкбеҙ.

Хеҙмәттең прогрессив методтарын, сәғәт графигын киң индереп, машина техникаһын тулыһынса файҙаланыу нигеҙендә сезон эсендә йомшаҡ һөрөү менән иҫәпләгәндә һәр бер шартлы тракторға 600 гектар ер эшкәртеүгә өлгәшәсәкбеҙ, һәр бер 15 футлы комбайн менән 400 гектар майҙандың урожайын йыйнаясаҡбыҙ.

ОРЛОҠСОЛОҠ ЭШЕ БУЙЫНСА

Беҙ һәр бер колхозда 1952 йылға сортлы орлоҡтар менән тулыһынса тәьмин итергә йөкләмә алабыҙ. Быйыл өсөн орлоҡсолоҡ участкаларында: бойҙай, һоло һәм арпаның һәр гектарынан кәмендә 22-шәр центнер, картофтың һәр гектарынан кәмендә 220-шәр центнер, костерҙан 4-әр центнер, люцернанан 3-әр центнер урожай үҫтереп алабыҙ. Урожайҙы ҡыҫҡа сроктарҙа йыйнап алырбыҙ һәм бөтә орлоҡ игененең яҡшы һаҡланыуын тәьмин итербеҙ.

МАЛСЫЛЫҠ БУЙЫНСА

Һәр бер колхозда һәм совхозда продукт бирә торған общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 34 йыллығына үтәрбеҙ.

Һәр бер 100 баш инә малдан: кәмендә 80 ҡолон, 100 быҙау, 140 бәрәс һәм һәр бер инә сусҡанан 13-әр сусҡа балаһы алып үҫтерербеҙ.

Фуражлы һәр бер һыйырҙан 2300-әр литр һөт һауып алырбыҙ, һәр бер һарыҡтан 3,5-әр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы, һәр бер тауыҡтан уртаса 80-шәр йомортҡа һәм күсле һәр бер умартанан 40-ар килограмм бал алыуҙы тәьмин итербеҙ.

Государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыу планын срогынан алда, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 34 йыллығына үтәрбеҙ.

Общественный малсылыҡты яҡшы сифатлы аҙыҡтар менән тәьмин итербеҙ. Бесән сабыуҙы һәм силос һалыуҙы, мал аҙығы культуралары урожайын йыйнауҙы үҙ ваҡытында үткәрербеҙ. Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың бөтә малдары өсөн етерлек аҙыҡ әҙерләрбеҙ һәм мал аҙыҡтарының йыллыҡ талабынан кәмендә 20 проценте күләмендә страховой запас булдырырбыҙ.

Бөтә малсылыҡ торлаҡтарын ремонтлауҙы һәм төҙөүҙе 1 октябрҙән дә һуңға ҡалдырмайынса тамамларбыҙ.

Ошо йөкләмәләрҙе алып, беҙ, Стәрлетамаҡ районы колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре уларҙы намыҫ менән үтәрбеҙ, тип ныҡлы һүҙебеҙҙе бирәбеҙ. Колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыу өсөн һәр яҡлап көрәшербеҙ һәм районыбыҙ ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарының яңы күтәрелешенә өлгәшербеҙ.

Йәшәһен беҙҙең тәрән аҡыллы юлбашсыбыҙ һәм учителебеҙ бөйөк Сталин!

Йөкләмә Стерлетамаҡ районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, совхоз һәм МТС эшселәренең, ауыл хужалығы специалистәренең дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Өфө 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы коллективы йыллыҡ производство программаһын срогынан алда үтәү өсөн көрәшә.

Һүрәттә: 7-се номерлә цехтың йәштәр бригадаһы стахановсыһы иптәш Р. Макарова эш өҫтөндә. Ул айлыҡ нормаһын 150 процентҡа үтәй.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Туймазы—Баулы нефтселәре ярышы

Октябрьский нефтселәренең эш тәжрибәләрен ҡулланабыҙ

Баулы ауылы хеҙмәтсәндәре өсөн 1946 йыл тарихи йыл булды. Унда бай девон нефте асылды. Ул ваҡытта был урындарҙа ике генә скважина бар ине. Уларҙың береһендә мин оператор булып эшләй башланым.

Ағымдағы йылдың февраль айында беҙ Октябрьский нефтселәрен социалистик ярышҡа саҡырҙыҡ. Улар беҙҙең тәҡдимде хуплап ҡаршыланылар.

Мин, ярыш договорына ҡул ҡуйып, айлыҡ планды 105 процентҡа үтәргә йөкләмә алдым. Алған йөкләмәмде үтәүҙә ҙур ғына уңыштарға өлгәштем дә инде. Апрель айы планы 103,8 процентҡа үтәлде. Ә май айында көндәлек норманы систематик 105 процентҡа үтәнем.

Быға беҙ ярышҡан «Туймазынефть» тресының 1-се номерлә промыслаһындағы алдынғы эш алымдарын ҡулланыу ныҡ ярҙам итте. Герман ҡырғыстарын киң ҡулланыу парафинға ҡаршы көрәште күп еңеләйтте. Ләкин уны күтәреү-төшөрөү операцияларын оператор ҡул көсө менән башҡара ине. Хәҙер беҙҙә лә электр лебедкалары ҡулланыла башланы. Улар эште байтаҡ еңеләйттеләр. Бер операторға бер нисә скважина хеҙмәтләндерергә мөмкинлек асылды.

Шулай итеп, «Туймазынефть» тресының беренсе номерлә промыслаһы коллективының фиҙакәр эш өлгөһө Баулы нефтселәре өсөн хеҙмәттең алдынғы стахановсы методтары мәктәбе булып тора.

Мин, Октябрьский нефтселәренең бай эш тәжрибәһен киң ҡулланып, йөкләмәләремде намыҫ менән үтәйәсәгемә тулы ышаныс белдерәм.

Ғ. Ниғмәтуллин.

«Баулынефть» тресының 1-се номерлә промыслаһы операторы.

Белорус һәм Украина ССР-ҙарының БМО-лағы делегацияларының БМО секретариатына хаттары

НЬЮ-ЙОРК, 3 июнь. (ТАСС). БМО секретариатының Белорус һәм Украина ССР-ы сит ил эштәре министерстволарына ебәргән телеграммаһы айҡанлы ошо йылдың 30 майында Белорус һәм Украина ССР-ҙарының БМО-лағы делегациялары БМО секретариатына хат ебәрҙеләр. Был телеграммала БМО Генеральный Ассамблеяһының ошо йылдың 18 майындағы резолюцияһының тексын (Ҡытай Халыҡ Республикаһына тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында — ред.) Белорус һәм Украина ССР-ы хөкүмәттәренең иғтибарына еткереү һоралғайны.

Хаттарҙа, Белорус һәм Украина ССР-ҙарының БМО-лағы делегациялары тейешле республикалар сит ил эштәре министрҙарының тапшырыуы буйынса, АҠШ-тың һәм БМО-лағы уның тарафынан етәкселек ителгән агрессор блок баҫымы аҫтында ҡабул ителгән юғарыла күрһәтелгән резолюцияның законһыҙлығы айҡанлы, Белорус һәм Украина ССР-ҙарының сит ил эштәре министерстволары БМО Уставына ҡапма-ҡаршы килеүсе был *законһыҙ резолюцияны* үҙ хөкүмәттәре иғтибарына еткереүҙе кәрәкһеҙ, тип иҫәпләйҙәр, тип хәбәр итәләр, тип күрһәтелә.

Делегациялар БМО секретариатынан был хаттарҙы Генеральный Ассамблеяның документтәре сифатында иғлан итеүҙе һорайҙар.

Культура-ағартыу учреждениеләре работниктәренең ҡала йыйылышы

1 июндә культура-ағартыу учреждениеләре работниктәренең ҡала йыйылышы булып үтте. Унда ҡаланың партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары вәкилдәре ҡатнаштылар.

Йыйылышта ВКП(б)-ның ҡала комитеты секретары иптәш Нафиков «Ҡала культура-ағартыу учреждениеләре эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» доклад менән сығыш яһаны.

— Беҙҙең ҡала, — тине иптәш Нафиков, — культура-ағартыу учреждениеләренә бай. Һуңғы йылдарҙа уларҙың эшендә һиҙелерлек алға китеш бар. Театрҙарыбыҙ үткән сезонда ҙур ғына уңыштарға өлгәштеләр. Улар быйыл беренсе тапҡыр яңы спектаклдәр сығарыу планын үтәнеләр һәм постановкаларҙың сифатын байтаҡ яҡшырттылар. Ләкин был өлкәлә етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Башҡорт государство опера һәм балет театры өсөн оригиналь әҫәрҙәр тыуҙырыу ҡәнәғәтләнерлек түгел. Уның репертуарында ни бары 2 опера («Ҡарлуғас», «Аҡбуҙат») һәм ике балет («Сыңрау торна», «Тау әкиәте») бар. Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһе, башҡорт совет яҙыусылары союзы, композиторҙар союзы һәм театрҙың етәкселеге юғары идеялы һәм яҡшы художестволы әҫәрҙәр тыуҙырыу өсөн тейешле саралар күрмәйҙәр. Шулай уҡ театрҙарҙы кәрәкле кадрҙар менән тәьмин итеүгә серьез иғтибар бирелмәй.

Өфө тамашасыларын кино менән хеҙмәтләндереү эше байтаҡ яҡшырҙы һәм культуралашты. Киноустановкаларҙың селтәре артты. 1950 йылдың III кварталында ғына 200 урынлы «Урал» кинотеатры эксплуатацияға тапшырылды һәм күп кенә заводтарҙың клубтарында даими киноустановкалар эшләй башланы, шулай уҡ күсмә кинолар(ҙың) һаны байтаҡҡа артты.

Ләкин былар бөтәһе лә хеҙмәтсәндәрҙең үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндерә алмайҙар әле. Киләсәктә кино-установкаларҙың селтәрен арттырыу һәм тамашасыларҙы кино менән хеҙмәтләндереү эшен артабан яҡшыртыу талап ителә.

Өфө ҡалаһында, — ти докладсы һүҙен дауам итеп, — 4 музей, 123 библиотека, 9 клуб һәм 170-тән артыҡ ҡыҙыл мөйөштәр бар. Һуңғы йылдарҙа уларҙың эшендә, шулай уҡ, серьез алға китеш һиҙелә. Ләкин өлгәшелгән уңышлыҡтар менән бер рәттән, күп кенә етешһеҙлектәр ҙә бар. Ҡайһы бер библиотека работниктәре китап фондын систематик рәүештә арттырып барыуға *иғтибар итмәйҙәр. Йыш* ҡына был маҡсат өсөн ебәрелгән средстволар файҙаланылмай ҡалалар. Ҡаладағы айырым библиотекаларҙың кәрәкһеҙ, шулай уҡ политик яҡтан зарарлы китаптарҙан таҙартылмауын насар фактарҙан һанарға кәрәк.

Докладсы артабан ҡаланың күп кенә эре завод-фабрикаларында клубтарҙың булмауын һәм культура-ағартыу учреждениеләрендә лекцион-пропаганда эшенең тейешле кимәлгә ҡуйылмауын, шулай уҡ баҡса һәм парктарҙа хеҙмәтсәндәрҙең ялдарын культуралы итеп ойоштороу өсөн тейешле шарттар тыуҙырылмауын һыҙыҡ өҫтөнә алып үтте.

Йыйылышта Өфө ҡала Советы исполкомының культура-ағартыу эштәре бүлеге мөдире иптәш Феденев сығыш яһап, һуңғы йылдарҙа ҡалала культура-ағартыу учреждениеләре селтәренең артыуы һәм уларҙың эштәре байтаҡҡа яҡшырыуы тураһында һөйләне.

— Был өлкәлә өлгәшелгән уңышлыҡтар менән бер рәттән, — тине ул, — күп кенә етешһеҙлектәр ҙә бар. Библиотека, клуб, парк, һәм баҡсаларҙа эшсе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе культуралы хеҙмәтләндереү эше тейешле кимәлдә түгел. Ҡаланың 3-сө, 11-се һәм 13-сө номерлә библиотекалары айырыуса насар эшләйҙәр.

— Беҙҙең ҡала театрҙары, — тине рус драма театрының баш режиссеры иптәш Крутов, — һуңғы театраль сезонда ҙур ғына ижади уңыштарға өлгәштеләр. Быйыл рус драма театрында постановкалар һан яғынан байтаҡҡа артты һәм уларҙың сифаттары ла яҡшырҙы. Театрҙың репертуарында совет драматургтары әҫәрҙәренең төп урын алып тороуы бик ыңғай күренеш. Мәҫәлән, быйыл театрҙа ҡуйылған 11 әҫәрҙең 8-е совет драматургтарының пьесалары.

«Октябрь» кинотеатрының директоры иптәш Фәттәхетдинов ҡала кинотеатрҙарында агит-массовый эштең насар ҡуйылыуы тураһында әйтте. Тамашасыларҙы культуралы хеҙмәтләндереү, — ти ул, — әле булһа тейешле кимәлдә түгел. Был тамашасылар араһында эш айырыуса насар тора. Был мәсьәлә буйынса мәктәп директорҙары һәм ҡала мәғариф бүлеге кинотеатрҙарға тейешле ярҙам күрһәтмәйҙәр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу учреждениеләре управлениеһының начальнигы иптәш Нәзиров парктарҙың һәм баҡсаларҙың насар эшләүен, уларҙа культура-массовый эштең тейешле кимәлгә ҡуйылмауын тәнҡитләне.

Йыйылыш ҡалалағы культура-ағартыу учреждениеләренең эшен артабан яҡшыртыу буйынса конкрет ҡарар ҡабул итте. Йыйылышта ҡатнашыусылар бөйөк Сталинға котлау хаты ҡабул иттеләр.

Большевистик ойошҡанлыҡ менән

Баймаҡ районы Сибай МТС-ының иптәш Юлыев етәкселек иткән трактор бригадаһы «Урғаҙа» колхозын хеҙмәтләндерә. Бригадала 3 коммунист һәм 3 комсомолец эшләй. Унда партия-комсомол группаһы төҙөлдө. Партия-комсомол группаһы яҙғы баҫыу эштәре башланғас та, социалистик ярышты киң йәйелдереп, үҙенең бөтә көсөн бригадала хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуға, агитация эшен юғары кимәлгә күтәреүгә йүнәлтте. Һөҙөмтәлә был бригада 950 гектар урынына 1328 гектар майҙанда ашлыҡ сәсеп, яҙғы сәсеүҙе ярыш договорында күрһәтелгән сроктан 3 көн алда тамамланы һәм шул уҡ ваҡытта, 1200 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Хәҙер партия-комсомол группаһы иртә пар һөрөү планын тиҙ көндә тамамлау өсөн социалистик ярышҡа тағы киңерәк ҡолас бирҙе. Социалистик хеҙмәт геройы Иван Бунеев методын ҡулланып, коммунистарҙан Хәсәнов, Сөләймәнов иптәштәр һәм комсомолец иптәш Ҡ. Сөләймәнов С—80 тракторҙарында смена нормаларын көн һайын 150—200 процентҡа үтәйҙәр. Был бригадала смена нормаһын үтәмәгән бер генә тракторист та юҡ.

З. Хисмәтуллин,

Сибай МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары.

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ АЛДЫНҒЫЛАРЫНДА

ОБЩЕСТВЕННЫЙ ХУЖАЛЫҠТЫ АРТАБАН ҮҪТЕРЕҮ ӨСӨН

1. Экскурсияла

Колхозсылар был урынды Бүмербай ит атайҙар. Был аҡлан ҙур түгел—майҙаны 0,25 гектарҙан артмаҫ. Уны, өс яғындағы тауҙар теҙмәһе елдән һаҡлай. Тауҙар өҫтөндә үҫеп ултырған урман аҡланға инмәйҙәр йылылыҡ һибеп тора кеүек...

Бөгөн ошо урынға егерменән ашыу кеше йыйылды. Улар Күгәрсен районы колхоздарының умартасылары — алдынғы тәжрибә менән уртаҡлашыу маҡсатында экскурсияға килделәр.

Тәүге һүҙ ошо умарталыҡтың хужаһы иптәш Зверьковҡа бирелде:

— Һеҙ был аҡлан менән таныштығыҙ, — тип башланы ул һүҙен. Умарталарҙы урынлаштырыу өсөн урынды дөрөҫ һайлап ала белеү бик ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Күрәһегеҙ, аҡын-тирәлә ...ләрҙән дә оҙон ағас юҡ. Аҡландың ...ы һырт һымаҡ бер ни тиклем күтәрелеп тора. Был көслө ямғыр ваҡыттарында умарталыҡты һыу баҫыуҙан һаҡлауҙы тәьмин итә. Ҡорттар оса торған аҙыҡ баҫыуының иң алыҫы өс километрҙан артмай. Тирә-яҡта үҫкән юкә, саған һәм ... ағастар төп бал сығанағы булып торалар. Бынан тыш, быйыл яҙ 0,02 гектарлыҡ майҙанда фацелия үләне сәстек. Был үләндең һәр бер сәскәһе 0,5—5 грамм ... бирә, ә бер гектар майҙанда 628 мең ... үҫенте була.

— Умартасы булыу, — ти иптәш Зверьков, — ул бөтәһенән элек ентекле ... һәм иғтибарлы кеше булыу тигән һүҙ. Был эштә мин 20 йылға яҡын ...ләйем. Мин был ваҡыт эсендә бик күп тәжрибә тупланым. 12 рамлы таҡта умарталар менән эш итәм. Уларҙы үҙем яһайым. Бөтәһенән элек, бер стандарт ҙурлыҡта эшләү өсөн умартаның бар өлөштәре буйынса ла шаблондар булдырҙым. Дадандарҙың стеналары араһына мүк йәки ваҡ ағас стружкаһы һалам. Был уларҙың йылы булыуын тәьмин итә. Рамкаларҙы теҙеп ҡуйылған дадандар өҫтөнә һалыу өсөн ҡамыштан 5 сантиметр самаһы ҡалынлығында септә үрәм. Был бик яйлы нәмә һәм уны үреү өсөн мин үҙем ҡулайлаштырып станок яһаным. Ошо септәләрҙе ҡулланыу бал ҡорттарын һыуыҡтан да, артыҡ йылынан да һаҡлай.

Ҡышлатыу осоронда бал ҡорттарын һаҡлау өсөн һәр даданда кәмендә 14 килограмм бал ҡалдырырға кәрәк. Бынан тыш страховой фонд ҡалдырыла. Ошо тиклем запас тотоу тауға бал йыйнау башланғанға тиклем ҡорттарҙың туҡ булыуын тәьмин итеү тигән һүҙ. Ошо шарттарҙа йәшәүсе ҡорттар бал етештереүгә һәләтле булалар. Уларҙы тик төрлө йоҡошло ауырыуҙарҙан ғына һаҡлау талап ителә. Беҙҙең умарталыҡта ҡорттар бер төрлө ауырыу менән дә зарарланғандары юҡ.

Бынан һуң иптәш Зверьков колхоз умартасылыҡ фермаһының уңыштары тураһында һөйләне. Был ферма райондағы алдынғы фермаларҙың береһе булып иҫәпләнә. Бында 102 семья умарта ҡорто бар. Былтыр тәбиғи шарттарҙың уңайһыҙ булыуына ҡарамаҫтан, уларҙың һәр ҡайныһынан уртаса 50-шәр килограмм бал алынды. Бал ҡорттарын үрсетеү планы арттырып үтәлде. Хәҙер бында төкөмлө бал ҡорттары үрсетеү эше алып барыла. Ҡорттарҙың бал биреүсәнлеген тағы ла арттырыу йәһәтенән иптәш Зверьков 24 рамлы оҙонса умарталар менән эш итеүҙе үҙләштереп килә. Уларҙың һәр ҡайныһында икешәр ҡорт инәһе тотола. Бал йыйнауҙың иң ҡыҙыу көндәре башланғас та уларҙың береһе алына һәм ҡорттар бергә ҡушыла. Ошо юл менән ошондай һәр бер умартанан, 12 рамлы ябай умартаға ҡарағанда, ике тапҡырға тиклем артыҡ бал алыуға өлгәшелә. Был умарталыҡта хәҙер 4 ошондай дадан системалы умарта бар.

Умартасылар башҡа бик күп мәсьәләләр менән дә ҡыҙыҡһындылар. Уларҙың байтағы балауыҙ эшләй торған машина булмауына, Өфө фабрикаһында етештерелә торған яһалма балауыҙҙың сифаты насар булыуына, тимер сыбыҡ көйәк нәмәләрҙең етештерелмәүенә ҡағылды. Ҡатнашыусылар экскурсияның һөҙөмтәһе менән тулы ҡәнәғәтләнеү белдерҙеләр һәм ошондай осрашыуҙарҙың йышыраҡ ойошторолоуын һоранылар.

М. Мөхәмәдиев,

Күгәрсен районы, Куйбышев исемендәге колхоз.

2. Резервтәрҙе файҙаланабыҙ

Районыбыҙҙа ваҡ колхоздарҙы эреләтеү буйынса үткәрелгән саралар ауыл хужалығы артелдәрен күп тармаҡлы хужалыҡлы итеп үҫтереү өсөн ҙур мөмкинлектәр тыуҙырҙылар. Районда элекке ваҡ 107 артелдән 31 колхоз төҙөлдө. Эреләтелгән колхоздарҙа хәҙер урожайҙы күтәреү, общественный малсылыҡты үҫтереү һәм продуктивлеген күтәреү, колхоздарҙың аҡса доходын арттырыу буйынса сикләнмәгән резервтар асылды. Уларҙы тулыһынса файҙаланыуҙы ойоштороу беҙҙең мөһим бурысыбыҙ булып тора.

Беҙҙең Шаран районы шарттарында баҡсасылыҡ, йәшелсәселек һәм умартасылыҡты уңышлы йәйелдереп ебәрергә мөмкин. Беҙҙә шулай уҡ ҡиммәтле техник культура булған киндерҙе һәм дарыу культураһы булған мәкте үҫтереү юлы менән колхоздарҙың доходын арттырыу мөмкинлектәре бар.

Киндер культураһын үҫтереүҙә райондағы бөтә колхоздарыбыҙ ҡатнашалар. Хәҙер был культуранан юғары урожай үҫтереүсе колхоздар күп. «Марс» колхозында иптәш Таҡхетдин Хәбиров етәкселек иткән звено 1950 йылда 11 гектар майҙанда киндер үҫтереп, юғары урожай алыуға өлгәште. Бында 6 гектарҙың һәр гектарынан 7-шәр центнер һәм 5 гектарҙың һәр береһенән 5-әр центнер киндер орлоғо алынды. Иптәш Хәбиров звеноһы колхозға 37 мең һум доход килтерҙе.

«Красный воин» колхозының иптәш Гудовский етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы 22 гектарҙың һәр гектарынан 6-шар центнер орлоҡ алды. Был һәр гектарҙан 4,5-әр мең һум доход, тигән һүҙ.

Колхоздарыбыҙ киндер үҫтереүгә ныҡ иғтибар бирәләр. Уны сәсеү өсөн иң яҡшы майҙандар бүленде, иң юғары агротехник кимәлдә үткәрелде. Был ҡиммәтле культура сәсеүлегенең 82 проценте сортлы орлоҡтар менән сәселде. Бөтә был саралар һөҙөмтәһендә беҙҙең район 1950 йылда государствоға киндер продукцияһы тапшырыуҙы, 1940 йылға сағыштырғанда, 53 процентҡа арттырҙы.

Уны үҫтереүгә беҙ быйыл да ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Быйыл уның майҙаны, былтырғыға ҡарағанда, 13 процентҡа артты. Бөтәһе 3 мең тонна серегән тиреҫ һәм 560 центнер минераль ашлама файҙаланылды. Тунға һөрелгән майҙанда, яҡшы эшкәртелгән тупраҡта, теҙмә сәскес менән сәселде, сортлы орлоҡтар ҡулланылды. Райондың киндер үҫтереүсе звенолары, «Беренсе май» колхозы звеноводы иптәш Пугачева өлгөһөндә, быйыл киндер сәсеүлегенең һәр гектарынан кәмендә 7-шәр мең һум доход алыу өсөн социалистик ярышҡа сыҡтылар.

Колхоздарыбыҙ дарыу культураһы булған мәк үҫтереүгә лә серьез иғтибар бирәләр. «Сәп» колхозы 1950 йылда мәк сәсеүлегенең һәр гектарынан 6000 һум доход алды. «Ленин юлы» колхозында мәк сәсеүҙән алынған йыллыҡ доход 52 мең һум тәшкил итте. Колхоздар уны сәсеүҙе быйыл да ҙур ойошҡанлыҡ менән үткәрәләр.

Беҙҙең район колхоздары резервтәрҙе тулыһынса файҙаланыу бурыстарын ҡуйҙылар. Бөтә был резервтәрҙе файҙаланыу эреләтелгән колхоздарҙың доходын байтаҡ арттырыуға алып барасаҡ.

Ф. Фәттәхов,

Шаран район ауыл хужалығы бүлегә мөдире.

3. Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу уңышты хәл итә

Беҙҙең «Ағиҙел колхозында быйыл яҙғы сәсеү тәүге тапҡыр эреләтелгән колхоз шарттарында үткәрелде. Ошо шарттарҙа эшләү ваҡ ауыл хужалығы артелдәрен эреләтеүҙең ҙур өҫтөнлөгөн күрһәтте. Был өҫтөнлөк эреләтелгән хужалыҡтарҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуға, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә һәм хеҙмәт дисциплинаһының нығыуына ярҙам итте.

Тотош майҙандарҙа ерҙе юғары сифатлы итеп эшкәртеп, унан тотороҡло урожай алыу бригадала хеҙмәтте дөрөҫ ойоштора белеүгә бәйләнгән. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә был тәңгәлдә беҙ бер ни тиклем тәжрибә туплай алдыҡ.

Колхозды эреләтеүҙең тәүге көндәрендә үк бригадаға тейешле йәнле тартыу көстәре, производство һәм хужалыҡ ҡоралдары беркетелде. МТС машиналарын бүлеүҙә бригаданың производство интерестәре күҙләгенән сығып ойошторолдо. Баҫыусылыҡ бригадаһындағы тартыу көстәре айырым колхозсыларға беркетелде. Был сараны үткәреү хужалыҡта эйәһеҙлекте бөтөрөүҙә һәм материаль ҡиммәтле нәмәләрҙе һаҡлауҙа яуаплылыҡты күтәреүҙә хәл иткес роль уйнаны.

Бригадалағы бөтә эштәр ҙә колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында раҫланған эске тәртипкә буйһоноп үткәрелә. Унда билдәләнеүенсә яҙғы сәсеү осоронда эш көнө 20 сәғәткә тиклем һуҙылды. Колхозсыларҙы айырым эш участкаларына беркетеү хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуға ҙур булышлыҡ итте. Трактор бригадаһын хеҙмәтләндереүгә *бүленгән колхозсылардан* С. Вәлитов, Ш. Вәлитов, Р. Вәлитова һәм башҡалар айырыуса яҡшы эшләнеләр. Ҡайҙа эшләйәсәген белеп торған колхозсылар бригадирҙың эшкә саҡырыуын көтөп тормайҙар. Баҫыу эштәрендә бригадалағы колхозсыларҙың 90 проценте самаһы ҡатнашты. Ҡайһы бер эштәрҙә индивидуаль сдельщинаны ҡулланыу хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә ҡиммәтле сара булды. Уны ҡулланыу һөҙөмтәһендә йәнле тартыу көстәре менән ер тырматыусы колхозсылар көндәлек эш нормаларын байтаҡҡа арттырып үтәүгә өлгәштеләр.

Баҫыусылыҡ бригадаһында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштора белеү ул трактор бригадаһы менән ныҡлы бәйләнеш тотоу тигән һүҙ. Был мәсьәләгә беҙҙә серьез иғтибар ителә. Бригадала машиналар паркының бер генә минутҡа ла тик тороуына юл ҡуйылмай. Һәр бер яңы задание менән трактор бригадаһының бригадирын таныштырып барам, эшкәртелергә тейешле булған участкаларҙың күләмен, урынын һәм унда барыу юлдарын күрһәтәм. Ә механизаторҙар тарафынан башҡарылған һәр бер эште ҡабул итеү колхоз председателенең һәм трактор бригадаһының бригадиры ҡатнашлығында үткәрелә. Ошо тәртип буйынса эшләү сифат өсөн яуаплылыҡты күтәрә.

Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу өсөн эҙмә-эҙлекле көрәш алып барғанда колхозсылар араһында, политик-тәрбиә эштәрен дөрөҫ ойоштороу ҙур роль уйнай. Ошоноң өсөн партияның колхоз эргәһендәге тәүге ойошмаһы менән берлектә колхозсылар араһында агитацион-массовый эште киң йәйелдерҙек. Партия ойошмаһының секретары иптәш И. Дәүләтчурин бригадаға даими рәүештә ярҙам күрһәтә. Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу буйынса үткәрелгән ошо саралар быйыл яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа сроктарҙа юғары агротехник кимәлдә үткәреү мөмкинлеген бирҙе.

В. Ниғмәтуллин.

«Ағиҙел» колхозының II номерлә баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры.

Христо Ботев

Христо Ботев — 1876 йылдың 2 июнендә төрөк баҫҡынсыларына ҡаршы Болгарияның азатлығы өсөн һуғышта һәләк булған атаҡлы шағир һәм революционер.

Христо Ботев 1849 йылдың 6 гинуарында Калофер ҡалаһында тыуған. Оҙаҡ ҡалала башланғыс белем алғас Ботев 1863 йылда Рәсәйгә килгән, һәм Одессала икенсе ирҙәр гимназияһында уҡыған. Йәш егет Одессала рус әҙәбиәте менән ныҡлап таныша, бигерәк тә революцион демократик яҙыусылар Чернышевский, Белинскийҙың, Добролюбовтың әҫәрҙәре менән ҡыҙыҡһына. Ботев рус алдынғы йәштәренең подпольеларе [illegible] булып тора, һәм рус революцион хәрәкәте менән бәйләнгән. Һәм был бәйләнешсе ул бөтә ғүмере буйынса эҙмәй.

Ботев Болгарияла һәм ситтә азат Болгария өсөн актив революцион эш алып барған.

1871 йылдың башында Ботев Галац ҡалаһында Париж коммунаһы өлгөһөндә «Болгар коммунаһы» ойошторған һәм үҙенең «Болгар коммунаһына ышаныу символы» яҙған.

Ул үҙ ғүмерендә күп кенә революцион газеталар сығарған һәм революцион демократик партияһының бер юлбашсыһы булып етешкән. 1876 йылда Көньяҡ Болгарияла халыҡ восстаниеһе тоҡанғас, уны [illegible] юлға ҡаршы [illegible] отрядта ойошторған һәм уға үҙе етәкселек иткән.

Христо Ботевтың исеме Болгария тарихында иң яҡшы исемдәрҙең береһе булып инған.

Түбәндә Христо Ботевтың шиғырҙарын урынлаштырабыҙ.

Хаджи Димитр

Ул һаман да тере. Батыр юғал
Һушһыҙ ята, батып ал ҡанға.
Яралары тәрән, йөҙ егеттең,
Һыҡтау аша тарала Балҡанға.
[illegible]
Ә мушкеттан һуға ташлаған.
Күк иренҙәр бар донъяны ҡарғай,
Күрел ҡаны тамып [illegible]
Ята батыр. Төштә күк йөҙөнән
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
Мәңге үлмәй. Уны ла ҙурлай.
Ер менән күк уны һағынып илай,
Ә кешеләр уға дан йырлай.
Көндәҙ бөркөт ҡанат йәйә уға,
Төнән бүре ялай яраһын,
Ҡыймыҙарҙың юлаш ҡоша — ыласын
Һаҡлай уны — үҙенеп ағаһын.

Бистәр кнәһә, йондоҙ һибелә күккә,
Ер аҡтыра айҙың нурынан.
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
Әйтсе, һеңелем, Караджата ҡайҙа?
[illegible]
[illegible]
[illegible]
[illegible]
Шундай яҡты, епея үҙҙәре,
Улар таңға тиклем бар донъянан
Караджата рухын эҙләне...
Һәм тап үҙа... Балҡан тауҙарында
Ята батыр, урғыс тап аға,
Бүре әйеләп ялай яраларын,
Ҡояш утын сәсә донъяға.

Минең доғам

Әй, хоҙайым, ғәҙел хоҙай,
Һин түгелһең күктәге, —
Һин йөрәгем өмөтәһен,
Һин — минең күңелдәге.
Бит һиңә түгел, башҡаға
Поп түгел монах бил бөгә.
Юк, һине динсе хайуандар
Тонсоҡтормай тәтәнгә.
Юк, һин ир менән ҡатынды
Балсыҡтан яһамаһың,
Ер улдарын ҡаслыҡҡа һәм
Ҡоллоҡҡа ташламаһын.
Һин түгел папа, батшаға
Залим власть биреүсе.
Бәхетһеҙлек тырнағында
Ярлыны тилмертеүсе.
Һин түгел тик доға менән
Фәҡирҙе йыбатыусы,
Һәм гүргә индәнгә тиклем
Ғазапта илатыусы.
Һин түгел яуыз тирандар

Ойтһыҙҙар аллаһы,
Һин йыртҡыс һәм ахмаҡтарҙы
Ҡапатыңа алмаҫһың.
Һин, тәңрем — ҡоллар терәге, —
Яҡты аҡылым минең.
Тиҙҙән күрер бар халыҡтар
Гүзәл еңеүең көнөн.
Әй хоҙайым, азатлыҡтың
Утын бир һәр йөрәккә,
Тирандарға ҡаршы халыҡтар
Күтәрелһен көрәшкә.
Ҡулдарыма көс бир, тәңре,
Яуға сыҡҡан сағымда,
Мин әҙер үлем, аҙапҡа
Халыҡтың алғы сафында.
Ялбарам һиңә, сит ерҙә
Йөрәгем һыуынмаһын,
Тауышым, бушлыҡтағыса
Яуап алмай, тынмаһын.

М. Кәрим тәржемәһе.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Тракторҙар эшләмәй ултыралар"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 82-се номерендә Арҡауыл МТС-ы (Салауат районы) хеҙмәтләндергән колхоздарҙың баҫыуҙарында ҡайһы бер тракторҙарҙың эшләмәй ултырыуҙары тураһында хәбәр баҫылғайны. Шуға айҡанлы ВКП(б)-ның Салауат район комитеты редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Тракторҙар эшләмәй ултыралар» тигән хәбәрҙә күрһәтелгән факттар бик урынлы тип табылды. ВКП(б) район комитеты бюроһы Арҡауыл МТС-ы директоры иптәш Абдуллиндең отчет докладын тыңлап, трактор паркы менән йомшаҡ етәкселек иткәне өсөн уға ҡаты иҫкәртеү яһаны һәм эште юлға һалыуға ҡарата тейешле ҡарар ҡабул итте. Шул уҡ ваҡытта агитколлективтарҙың эштәрендә булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ҡарата практик саралар билдәләнелде».

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Татар мәктәптәре өсөн ҡайһы бер дәреслектәрҙәге етешһеҙлектәр тураһында

Совет йәштәре, Совет мәктәбе уҡыусылары, һис шикһеҙ, үҙ крайҙарын яҡшы белергә һәм өйрәнергә тейештәр.

Хәҙерге ваҡытта Башҡортостандағы татар мәктәптәрендә крайҙы—Башҡортостанды өйрәнеү эше ҡәнәғәтләнерлек түгел. Сөнки Башҡортостандағы татар мәктәптәре Татарстанда баҫылған дәреслектәр менән эш итәләр. Был дәреслектәрҙә Татарстан тураһында мәғлүмәттәр бик күп бирелһә лә, Башҡортостанда промышленностең үҫеүе, ауыл хужалығында булған ҙур уңыштар, культура, уҡытыу-тәрбиә эштәрендәге алға китеүҙәр тураһында бер төрлө лә материал юҡ. Республикалағы башҡорт мәктәптәренең хәле бөтөнләй башҡаса. Сөнки башҡорт мәктәптәре өсөн дәреслектәр Башҡортостанда баҫылғанлыҡтан, крайҙы — Башҡортостанды өйрәнеү материалдары был дәреслектәрҙә тулы ғына бирелгән.

Бына башҡорт мәктәптәренең 4-се кластары өсөн «Туған тел дәреслеге». Был дәреслектә крайҙы — Башҡортостанды өйрәнеү материалдары итеп Ишембай, Өфө, Янған-тау, ике тапҡыр герой Муса Гәрәев, Александр Матросов тураһында материалдар, Чапаев, Хоҙайбирҙин тураһында иҫтәлектәр һәм башҡалар бирелгән. Башҡортостандағы татар уҡыусылары өсөн Татарстанда баҫылған дәреслектә был материалдар, әлбиттә, юҡ. Ул ғына ла түгел, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең бөйөк юлбашсыһы В. И. Лениндең Өфөлә булыуы тураһында ла Татарстанда сыҡҡан дәреслектәрҙең береһендә лә яҙылмай.

Был ике республиканың үҙенә генә хас булған специфик үҙенсәлектәре бар. Элек өрәм һәм жуһай үҫеп ултыра торған далаларҙа хәҙер ҙур ҡалалар төҙәлде. «Икенсе Баку»-ҙың үҙәге Башҡортостандың йәш ҡалаһы Октябрьский барлыҡҡа килде һәм башҡалар. Татарстанда яңылыҡтар юҡ тип уйларға ярамай, әлбиттә бар, яңылыҡтар күп. Ләкин Башҡортостандағы татар уҡыусыһы үҙенең тыуған ере Башҡортостанды өйрәнергә, белергә тейеш.

Бер үк класс өсөн яҙылған был ике дәреслек береһе икенсеһенән бик ныҡ айырылып тора. Шуға күрә Башҡортостандағы татар мәктәбендә уҡыусы тыуған крайҙы башҡорт мәктәбендә уҡыусыға ҡарағанда аҙыраҡ белә. Был, әлбиттә, ҙур ғына етешһеҙлек. Был етешһеҙлектәр урта һәм ете йыллыҡ татар мәктәптәрендә лә ҡабатлана.

Башҡортостанда татар мәктәптәренең һаны аҙ түгел. Мәҫәлән, башланғыс мәктәп һаны ғына ла 1036-ға етә. Мәктәп һайын 100 уҡыусы булғанда һан тағы ла ҙурая. Шулай булғас, Башҡортостандағы татар мәктәптәре өсөн ҡайһы бер дәреслектәрҙе баҫтырыу эшен Башҡортостан Мәғариф министерствоһы үҙ ҡарамағына алһа, хәҙерге дәреслектәрҙә булған етешһеҙлектәр ҡабатланмаған булыр ине.

Киләсәктә татар мәктәптәре өсөн дәреслектәр баҫтырғанда башланғыс мәктәп дәреслектәренең беренсе, икенсе, өсөнсө һәм дүртенсе кластары өсөн булған уҡыу китаптарына Башҡортостан край материалдары өҫтәлергә тейеш. Урта һәм ете йыллыҡ мәктәптәрҙең V—VII кластарында әҙәбиәт, әҙәби уҡыу планында крайҙы өйрәнеүгә бәйләп бер нисә башҡорт яҙыусыларының ижадтары менән уҡыусыларҙы таныштырырға кәрәк булыр ине. Урта мәктәптең VIII—X кластарында әҙәбиәт тарихының ҡыҫҡаса курсы өйрәнелгәнлектән, татар әҙәбиәтенең курсы тулыһы менән үтелгәс, башҡорт яҙыусылары өсөн айырым сәғәт бирeү шулай уҡ файҙалы буласаҡ.

Ғ. Китабов.

Тибет

(БЕЛЕШМӘ)

1951 йылдың 23 майында Пекинда Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар тураһында Ҡытай Үҙәк халыҡ хөкүмәте менән Тибеттең урындағы хөкүмәте араһында килешеүгә ҡул ҡуйылды.

Ҡытайҙың милли автономиялы өлкәһе — Тибет Азияның үҙәгендә, донъялағы иң бейек һәм иң ҡалҡыулыҡҡа урынлашҡан. Тибет ҡалҡыулығының уртаса бейеклеге диңгеҙ кимәленән 4.500 метр. Төньяҡта ул 7 мең метрға тиклем бейеклектәге Куэнь-лунь тау һырты менән, көньяҡта — донъялағы иң бейек—8.882 метр бейеклектәге Чомолунгм (Эверест) бейеклеге булған ҡеүәтле Гималай тау системаһы менән сикләнә.

Һиндия океаны Көньяҡ Тибет климатына ыңғай йоғонто яһай. Тау араларындағы һәм йылға буйҙарындағы туғайлыҡтарҙа иген үҫтерергә мөмкин. Бында игенселек сиктәре 4.650 метр бейеклеккә тиклем етә. Тибет халҡының төп өлөшө Трансгималай менән Гималай араһында йәшәй.

Синьхуа агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Тибет халҡы сама менән алғанда 3.750 мең кешенән тора. Уның төп массаһын тибетлеләр тәшкил итәләр.

Административ ҡоролошо

Будда руханилеге (ламалар) Тибеттә ҙур роль уйнаны һәм хәҙерге ваҡытта ла уйнай. IX быуаттың икенсе яртыһында ул ғәйәт ҙур байлыҡтарҙы үҙ ҡулдарына туплап, хакимлек итеүсе кескә әйләнде. XIII быуатта Ҡытай императорының Тибеттә юғары власте Сакья монастыренең жрецена тапшырғандан һуң, Тибеттә һуңынан «далай» (верховный) титулын алған жрецтәр — батшаларҙың политик власе барлыҡҡа килде. Жрецтарҙың был власе монархистик власть менән бергә йәшәне. Сиркәү 1640 йылда Тибеттә идара итеүҙең хәҙерге ваҡытта йәшәгән формаһын урынлаштырҙы. Далай-ламаға ярҙамға сиркәү эштәре буйынса уның урынбаҫары — панчен-лама билдәләнелде, панчен-лама, далай-лама кеүек үк, будданың ер йөҙөндәге кәүҙәләнеше итеп иҫәпләнә.

Буддизм Тибеттә киң таралған. Бында 3 меңдән артығыраҡ монастырь һәм 300 мең монах бар.

Тибет территорияһы монастырҙарға буйһонған 13 районға бүленгән.

Тибеттең баш ҡалаһы — Лхаса. Ул — милли автономиялы өлкәнең политик һәм культура үҙәге. Ҡалала 20 мең самаһы халыҡ йәшәй. Ҡаланың иғтибарға алырлыҡ урыны булып Потала — далай-ламаның дворец-крепосе тора.

Тибеттең икенсе әһәмиәтле ҡалаһы — панчен-ламаның даими йәшәү урыны — Шигатзе. Ул Лхаса менән тау аша үткәрелгән юл менән бәйләнгән.

Халыҡтың кәсебе

Халыҡтың төп кәсебе — күсмә малсылыҡ. Топоздар (яктар), һарыҡтар, оҙон йөнлө кәзәләр, ишәктәр һәм понийҙар үрсетелә.

Халыҡтың төп массаһы Көньяҡ Тибеттә, башлыса, Цзанпо йылғаһының туғайында (Брамапутра йылғаһының өҫкө өлөшө) һәм уға ҡойған йылғалар буйлап урынлашҡан. Бында шулай уҡ игенселек менән шөғөлләнәләр. Ерҙе һуҡа һәм кәтмән менән эшкәртәләр. Арпа, бойҙай, тары сәсәләр.

Тибеттә шулай уҡ алтын, көмөш, баҡыр, тимер бар, ләкин улар аҙ тикшерелгәндәр һәм бөтөнләйгә эшкәртелмәйҙәр тиерлек.

Промышленность йомшаҡ үҫкән. Күп кенә райондарҙа кустар ысул менән алтын сығаралар. Ҡатмарлы булмаған металл изделиелар, йөн туҡымалары, балаҫтар, келәм, балсыҡ һауыт-һаба эшләп сығаралар. Лхасала бәләкәй генә гидроэлектростанция бар.

Эске сауҙа мал аҫраусылар менән игенселәр араһында тауарҙар менән натураль алмашыуҙан тора. Ҡайһы бер урындарҙа аҡса йыш ҡына төрлө тауарҙар менән алмаштырыла. Ләкин аҡсаның роле әкренләп күтәрелә.

Тибеттә тимер юлдары юҡ. Шоссе юлы тик Чәмдо менән Лхаса араһында ғына. Тибеттең эсендә күрше провинциялар һәм Һиндия менән бәйләнеш йөккә хайуан өҫтөнә һалып йөрөтә торған юлдар ярҙамында тотола.

Тибет борондан ваҡыттан уҡ Ҡытайҙың ҡушылмта өлөшө булып тора. VII быуаттан алып Тибет халҡы Ҡытай техникаһын, фәнен үҙенлә ҡуллана башланы.

Йөҙ йылдар буйына Ҡытай үҙенең көнбайыш провинцияһын дошмандарҙан бер нисә тапҡыр яҡланы. XVIII быуат башында Ҡытай ғәскәрҙәре Тибетка джунгар монголдарының һөжүмен кире ҡаҡтылар. Шул уҡ йөҙ йыллыҡ аҙағында Ҡытай Непалдан Тибетка гурҡ ҡәбиләләренең емертеүсе һөжүмен кире ҡаҡты. Ҡытай шулай уҡ Тибет халҡы интерестарын Англия колонизаторҙарының ҡоллоҡло договорҙарҙы көсләп тағыуынан йәки уның территорияһынан айырым өлөштәрен айырып алыуҙан күп тапҡырҙар яҡланы.

Империалистарҙың Тибеттә эҙләнеүҙәре

Англияның Тибетка үтеп инергә һәм уға үҙенең йоғонтоһон таратырға маташыуы Һиндияны баҫып алыуҙан башланды.

Тибет руханилегенең төрлө группалары араһында һуғыш тоҡандырыу һәм сепаратив тенденциялар барлыҡҡа килтереү инглиздәрҙе ҙуракле һөҙөмтәгә килтермәнеләр. XVIII быуат аҙағында Ост-Индия компанияһы Тибет сауҙаһын баҫып алырға һәм уны шулай итеп экономик яҡтан буйһондорорға маташты. Ләкин Ҡытай хөкүмәте тейешле саралар күрҙе һәм сит ил кешеләренең Тибетка инеүе өсөн юлды бикләне. 1890 йылда Англия Һиндиянан Тибетка айырыуса уңайлы юл үткән Сикким кнәздеген Тибеттән айырып ала һәм һуңынан Бутанды баҫып ала алды. 1904 йылда разведчик Юнгхесбен командаһы аҫтында 3 мең кешенән торған Англияның хәрби отряды Тибетка баҫып инде. Тибет халҡы был отрядтең Лхасаға табан хәрәкәт итеүенә ҡамасаулыҡ итергә тырышты. Күп кенә ҡан ҡойҙорос бәрелештәр булды. Англия ғәскәрҙәре далай-ламаны баҫып алыу һәм уға ҡоллоҡло договорҙарҙы көсләп тағыу маҡсатында Тибет баш ҡалаһына инделәр. Ләкин далай-лама был ваҡытта Монголияға, дөрөҫ Рәсәй сиктәренә китергә өлгөргәйне. Британия экспедицияһының походы пленныйҙарҙы ғазаплау һәм Лхасаны талау менән бергә үткәрелде.

Хәрби баҫып инеү Тибеттең буйһондороулоуына килтермәне, ә 1907 йылдағы Англия-Россия килешеүенә ярашлы рәүештә, Англия Тибеттең эске эштәренә тығылыуҙан һәм унда уступкалар һәм концессиялар алырға тырышырға маташыуҙан баш тартты һәм артабан Тибет менән бәйләнеште тик Ҡытай аша ғына алып барырға йөкләмә алды.

1913 йылда инглиздәр үҙҙәре тарафынан эшләнгән планды Ҡытайға көсләп тағырға маташтылар. Был план буйынса Тибет «тышҡы», автономиялы һәм «эске» Тибетка бүленергә тейеш ине, шул уҡ ваҡытта «тышҡы» Тибет фактик алғанда инглиздәрҙең колонияһына әүерелергә тейеш ине. Беренсе бөтә донъя һуғышы осоронда һәм унан һуңғы йылдарҙа инглиздәр, халыҡтың ҡаршылыҡ күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, Тибетка үтеп инергә ынтылыуҙарын йомшартманылар. Феодалдарҙы һәм ҡайһы бер сиркәү етәкселәрен һатып алыу юлы менән, шулай уҡ геологик, географик, этнографик һәм башҡа «эҙләнеүҙәр» аҫтында улар Тибеттә ныҡый алдылар. 1922 йылда Англия Калькутта-Лхаса телеграф линияһын төҙөнө. 1936 йылда Лхасала Англияның даими политик миссияһы булдырылды.

Һуғыштан һуңғы осорҙа Америка империалистарының Тибетка үтеп инеүе көсәйҙе. 1942 йылда уҡ Американың стратегик хеҙмәт (разведка) бюроһы унда өмөрткес һәм шпионлыҡ эше өсөн агенттар ебәрҙе. Америка шпиондары хәрби-стратегик һәм экономик яҡтан Тибетте ныҡ өйрәнделәр, заговорҙар ойоштороусылар һәм Тибетте Ҡытайҙан айырып алыу өсөн пропаганда алып барҙылар. Американлылар Тибеттә экономик буйһондороу политикаһын үткәрҙеләр.

1949 йылдың йәйендә реакцион гоминдансы ғәскәрҙәрҙең тулы тар-мар ителәсәге алдан хәл ителгәс, Англия-Америка империалистары һатлыҡ Чан Кай-ши кликаһы менән килешеп, Тибетте гоминдансы Ҡытай менән мөнәсәбәттәрҙе өҙөргә котортолар. Англия-Америка империалистарының баҫымы аҫтында Тибеттең урындағы хөкүмәте Тибеттең Ҡытайҙан «бойондороҡһоҙ» булыуын иғлан итергә мәжбүр булды.

Был «бойондороҡһоҙлоҡто» иғлан итеүҙең мәғәнәһе унан һуң булған күп кенә белдереүҙәрҙән асыҡланды.

Англия-Америка һуғыш тоҡандырыусылары Тибет менән сиктәш булған территорияларҙа аэродромдар һәм шоссе юлдарын йылдам төҙөй башланылар; Лхасаға Американың хәрби материалдары һәм ҡоралдары килтерелде. Тибет шпионажлыҡ, диверсияларҙың һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһына ҡаршы ҡоралды көрәштең терәк пунктына әүерелдерелде.

Тибетте азат итеү өсөн көрәш

Англия-Америка һуғыш тоҡандырыусыларының эҙләнеүҙәре Тибет халҡының үҫә барған отпорына осранылар. Мәҫәлән, Ҡытай Халыҡ Республикаһы иғлан ителгәндән һуң күп тә үтмәй Тибет менән күрше Ганьсу, Цинхай, Сычуань һәм Сикан провинцияларында йәшәүсе йөҙәр меңләгән тибетле Ҡытайҙың Үҙәк халыҡ хөкүмәтенә Тибетте Ҡытайға ҡушырыу һәм уны азат итеү өсөн армия ебәрергә һорап мөрәжәғәт итте. Тибет вәкиле Тинь Бло Ҡытайҙың Халыҡ политик консультатив конференцияһында Англия-Америка агрессорҙарын, «Тибетка баҫып инеүҙең бөтә төр пландарынан киҫекмәҫтән баш тартығыҙ. Әгәр ҙә Тибеттә провокация башларға батырсылыҡ итһәгеҙ, тейешлә яза аласаҡһығыҙ», тип иҫкәртте. 1949 йылдың 1 октябрендә Ҡытай Халыҡ Республикаһының иғлан ителеүе айҡанлы панчен-лама Тибет халҡы исеменән Мао Цзе-дунға һәм Чжу Дэгә Тибетте азат итергә һорап мөрәжәғәт итте.

Ҡытай Халыҡ Республикаһының хөкүмәте Тибет халҡының һәм Ҡытай халҡының ихтыярын яҡлап, 1950 йылдың октябрендә Көньяҡ-Көнбайыш хәрби округының Халыҡ азатлыҡ армияһының һәм икенсе полевой армияның частарына Тибетка һөжүм итергә, Тибет халҡын империалистик иҙеүҙән азат итергә һәм Ҡытай сиктәренең оборонаһын ныҡытырға приказ бирҙе. Директива офицерҙарҙы һәм һалдаттарҙы Тибет халҡы менән тығыҙ берләшергә һәм аҙсылыҡ милләттәргә ҡарата намыҫлы һәм ғәҙел политиканы тормошҡа ашырырға саҡырҙы.

Азат итеүсе арманы Тибет халҡы ҡайнар яҡланы. Йөк ташығанда, шәп ағыусы йылғалар аша сыҡҡан ваҡытта, тауҙарҙағы һуҡмаҡтар буйлап хәрәкәт иткән ваҡытта уға ярҙам күрһәтелде. Тиҫтәләгән ҡалаларҙы һәм райондарҙы азат итеп, Халыҡ армияһы мөһим стратегик пункт Чамдо ҡалаһын — крепосен алды.

Ҡытай Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең политикаһы Тибет халҡына аңлайышлы һәм яҡын. Тибет халҡы тыуған Ҡытай армияһын тәрән шатлыҡ тойғоһо менән ҡаршыланы. Халыҡ азатлыҡ армияһы Тибет халҡы араһында мөһим ағартыу эше алып бара.

Халыҡ-азатлыҡ армияһы тарафынан азат ителгән Сикан провинцияһында Чамдо ҡалаһында 1950 йылдың 27 декабренән 1951 йылдың 2 ғинуарына тиклем үткәрелгән Чамдо районы халыҡ вәкилдәренең конференцияһында Тибетте тыныс азат итеү өсөн көрәш Комитеты төҙөлдө.

Бөтә Тибет халҡының ынтылыштарын һәм теләктәрен сағылдырып, Комитет Тибет мәсьәләһен тыныс хәл итеүгә саҡырыусы мөрәжәғәт ҡабул итте.

Далай-лама, Тибет хөкүмәтенең хата, антипатриотик эшен күреп, власте үҙенә алды һәм Тибеттең урындағы хөкүмәтенең элекке хата политикаһын төҙәтә башланы. Ҡытай Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең белдереүенә яуап итеп, ул Пекинға Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар айҡанлы Үҙәк халыҡ хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн Калон Нгабо Нгаванг Джигме етәкселегендә тулы хоҡуҡлы делегация ебәрҙе. Апрель аҙағында далай-лама, шулай уҡ панчен-лама делегацияһы үҙен оҙатыусы 44 кешенән торған группа менән Пекинға килде.

Ҡытай Үҙәк халыҡ хөкүмәте менән Тибеттең урындағы хөкүмәте араһында Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар тураһында 1951 йылдың 23 майында Килешеүгә ҡул ҡуйылды.

Был килешеүҙең әһәмиәтен характерлап, Мао Цзе-дун былай тине:

«Бер нисә йөҙ йылдар буйына Ҡытайҙағы төрлө милләттәр берләшмәгәйнеләр. Атап әйткәндә, Ҡытай халҡы менән Тибет халҡы араһында айырмалыҡ йәшәй ине. Шулай уҡ Тибет халҡының үҙендә лә айырмалыҡ йәшәне. Был, реакцион Маньчжурия хөкүмәтенең һәм Чан Кай-ши хөкүмәтенең идара итеүенең һөҙөмтәһе, шулай уҡ империалистик провокацияләр һәм дошманлыҡ таратыу һөҙөмтәһе булды. Хәҙер далай-лама етәкселек иткән көстәр һәм панчен-лама етәкселек иткән көстәр Үҙәк халыҡ хөкүмәте менән берләштеләр. Быға Ҡытай халҡы империалистик хакимлекте һәм эске реакция хакимлеген ҡолатҡандан һуң ғына өлгәшелде. Был берҙәмлек бер иҫ икенсе яҡты ҡыҫырыҡлаған берҙәмлек түгел, ә туғандаш берҙәмлек булып тора. Бындай берҙәмлеккә бөтә яҡтарҙың берләшкән тырышлыҡтары һөҙөмтәһендә өлгәшелде. Бөгөнгө көндән алып был берҙәмлек нигеҙендә беҙҙең бөтә милләттәребеҙ бөтә өлкәләрҙә — политик, экономик һәм культура өлкәләрендә үҫеш һәм прогресс юлы менән барасаҡтар».

Бөйөк Ҡытай халҡы, шул иҫәптән Тибет халҡы Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар тураһында килешеүҙе ҡотлай. Улар был килешеүҙе Ҡытай Халыҡ Республикаһының тыныслыҡ һаҡлаусе политикаһының ҙур еңеүе итеп баһалайҙар.

Б. Юсов.

«Правда» газетаһынан ҡыҫҡартып алынды.

Эске резервтәрҙе файҙаланыу иҫәбенә

Тракторҙарға һәм тағылма инвентарҙарға көҙгө һәм ҡышҡы ремонт эштәре башланыр алдынан МТС партия ойошмаһының асыҡ йыйылышын үткәрҙек.

Йыйылышҡа коммунистарҙан башҡа партияһыҙ механизаторҙар ҙа ҡатнаштылар. Унда машина-трактор станцияһының эске резервтарын тулыһынса файҙаланыуҙы ойоштороу тураһындағы мәсьәлә тикшерелде. Көн тәртибе буйынса сығыш яһаусы коммунистар эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу өсөн ҙур мөмкинлектәр барлығын әйттеләр һәм был резервтарҙы хәрәкәткә ебәреүгә юнәлтелгән ҡиммәтле тәҡдимдәр индерҙеләр.

МТС-тың баш механигы коммунист иптәш Фәттәхов тракторҙарҙы һәм тағылма инвентарҙарҙы ремонтлауҙа эске резервтарҙы файҙаланып, запас частарға тотоласаҡ средстволарҙың байтаҡ өлөшөнә экономия яһауҙы, айырым деталдәргә реставрация яһау юлы менән эшләргә мөмкинлеген әйтте. Иптәш Фәттәховтың был инициативаһын механик-контролер Мортазов, трактор бригадаһы бригадирҙарынан Ханнанов, Шаһиев, тракторсыларҙан Гәрәев, Князев, Әхмәтов иптәштәр яҡлап сығыш яһанылар. Улар ремонтта ла, баҫыу эштәре осоронда ла, бөтә тармаҡтар буйынса ла эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланып, государство тарафынан билдәләнгән аҡса средстволарын экономия менән тотоноу өсөн конкрет йөкләмәләр алдылар һәм үҙ-ара социалистик ярышҡа сыҡтылар.

Коммунистар тарафынан башланған был инициатива ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Тракторҙарҙы ремонтлауҙа МТС механизаторҙары 21580 һумлыҡ средствоға экономия яһанылар. Ә тағылма инвентарҙарға ремонт үткәреүҙә государство тарафынан билдәләнгән средствоның 35407 һумына экономия яһалды. Икенсе номерлы трактор бригадаһы (бригадиры иптәш Шаһиев) ике СТЗ—НАТИ, 3 СХТЗ һәм бер ДТ—54 маркалы тракторҙарҙы ремонтлауҙа ғына 4000 һумлыҡ экономия яһаны. Хәкимов, Кәримов, Ханнанов иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадалары тракторсылары ла ремонт осоронда 3500—4000-әр һум экономия яһанылар. Механизаторҙар экономияланған аҡса иҫәбенә 5 культиваторҙы, 4 сәскесте, 10 прицепте аяҡҡа баҫтырҙылар, 5 һабанды предплужник менән йыһазландырҙылар.

Механизаторҙар, Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Буненвтең мөрәжәғәтен өйрәнгәс, тағы ла яҡшыраҡ эшләргә йөкләмә алдылар һәм баҫыуҙа эшләй башлауҙың тәүге көндәренән үк эшләп сығарыуҙы арттырыу һәм экономия өсөн көрәшеү өсөн үҙ-ара социалистик ярышҡа сыҡтылар.

Коммунист Нурый Хәкимов етәкселек иткән 3-сө номерлы трактор бригадаһы «Бөгдән» колхозын хеҙмәтләндерә. Был бригада члендары план буйынса 700 гектар урынына 972 гектар майҙанда сәсеү, 935 гектар культивациялау, 104 гектар яҙғы һөрөү һәм 400 гектар майҙанда пар һөрөү үткәрҙе. Бригада 413 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Бригада был экономияланған яғыулыҡ иҫәбенә 26 гектар пар ере эшкәртте.

Фәхриҫлам Хәжиев етәкселек иткән 13-сө номерлы трактор бригадаһы ла колхоз менән төҙөлгән договорҙы иң яҡшы агротехник срокларҙа үтәп бара. Был бригада члендары яҙғы баҫыу эштәренең 20 көнө эсендә генә 895 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһанылар. Был экономия иҫәбенә 73 гектар ер эшкәрттеләр.

Коммунист тракторсыларҙан Хәбир Бакиров, Миңнешәйех Исламов, Хәким Ғабделисламов, Әбүнәрим Исмәғилов иптәштәр, тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланып, смена нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр һәм яғыулыҡҡа экономия яһап эшләйҙәр. Был иптәштәр һәр бер гектар эшкәртелгән ерҙең үҙенә төшөү хаҡын 5—7 процентҡа тиклем кәметтеләр.

Беҙҙең МТС коллективы комбайндар һәм башҡа төр урожай йыйыу машиналарын ремонтлауҙа ла государство тарафынан бирелгән средствоның 30 процентына экономия яһау өсөн көрәшә. Коммунист комбайнер Баһауыв, Әхмәтьянова иптәштәр был эште ойоштороуҙа инициатор булып торалар. Иптәш Баһауыв «Сталинец—1» комбайнын срогынан алда 5 майға яҡшы сифатлы итеп ремонтланы һәм ул ремонт процесында 1234 һум экономия яһаны. Әхмәтьянова — 896, Ағзулин — 1300, Ғабдуллин — 836 һум экономия яһаны. Был иптәштәр ремонт өсөн билдәләнгән средствоның 30—35 процентына экономия яһанылар.

МТМ эшселәре араһында ла, эске резервтарҙы файҙаланып, запас частарға ремонт өсөн талап ителгән башҡа материалдарҙы экономия менән тотоноу киң урын алды.

Ғ. Гәрәев,
Салауат районы Имәндекүл МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары.

Урожай йыйнауға әлгәлә әҙерләнәләр

Стәрлетамаҡ районы Николаевка баҫыу һаҡлауһы урожай үстереү станцияһының тәжрибәле комбайнеры Алексей Стражков уҙған йыл «Сталинец—6» комбайнында 723 гектар майҙандың урожайын йыйнаны. Ул быйыл бөтә резервтарҙы тулыһынса файҙаланып, шул уҡ комбайн менән үҙе хеҙмәтләндергән «9 января» колхозында кәмендә 1000 гектар майҙандың урожайын йыйырға, 12 мең центнер ашлыҡ һуғырға йөкләмә алып, районның бөтә комбайнерҙарын социалистик ярышҡа саҡырҙы.

Хәҙер иптәш Стражков алған йөкләмәһен үтәү өсөн бөтә әҙерлек эштәрен алып бара. Уның комбайны күптән уҡ ремонттан сыҡты. Шул уҡ ваҡытта ул уны ерлек тотҡос менән йыһазландырҙы һәм бөнгә ҡулайлаштырыуҙар индерҙе.

Агрегат сәғәт графигы менән эшләп, көндөҙ ҙә һәм төнөн дә урожай йыйнаясаҡ. Быныц өсөн комбайн яҡтылыҡ менән йыһазландырылды. Агрегат урожай йыйнау менән бер үк ваҡытта ҡамыл тубын йомшартыуҙы ла үткәрәсәк. Комбайн бункерындағы игенде эш барышында бушатыу өсөн колхоз правлениеһы коммунист иптәш Кудрявцев етәкселегендә 10 ылау һәм етерлек кешеләр бүлде.

Комбайн агрегатының баҫыусылыҡ бригадаһы менән ныҡлы дуҫлыҡта эшләүе колхозға урожай йыйыу һәм государствоға иген тапшырыуҙы алғылы метод менән үткәреүгә мөмкинлек бирәсәк.

А. Клементьев.

Утау эштәре киң йәйелдерелде

Шишмә районының игенселәре мул урожай үстереп алыуҙы тәьмин итеү өсөн сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу эштәрен киң йәйелдерҙеләр.

«Заветы Ильича», Карл Маркс, Сталин һәм Жданов исемендәге колхоздар яҙғы культураларҙы беренсе ҡат утауҙы тамамланылар. Бында 330—450 гектар майҙанда утау эштәре үткәрелде.

Хәҙер был колхоздарҙың члендәре көнбағыш сәсеүлектәрен утау һәм һирәгәйтеү эштәрен үткәрәләр.

Х. Улимаев.

Клуб—ауылда культура-ағартыу эшенең үҙәге

— Бөгөн клубта яңы спектакль!

Байҡаҡ районының Тәмәс ауыл клубында йыш ҡына ошондай белдереүҙәр уҡырға тура килә. Клуб эргәһендә ойошторолған үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәге үҙенең эшен уңышлы ойоштороҙо. Һуңғы ваҡыт эсендә генә унда бер нисә спектакль ҡуйылды, концерт номерҙәре бирелде.

Клубта культура-ағартыу эштәренең башҡа төрлө формалары ла киң ҡулланыла. Төрлө фәнни, политик темаларға лекциялар, докладтар уҡыла.

Клуб — ауылда культура-ағартыу эштәренең үҙәге булып әүерелде.

К. Әхмәтьянов.

Фермалар ремонтлана

Бәләбәй. Районда малсылыҡ эшенә ныҡ иғтибар ителә. Колхоздарҙа бесән өсөн бер йыллыҡ үлән сәсеү планы 168 процентҡа үтәлде.

«14 лет Октября», Поскребышев һәм Чапаев исемендәге колхоздарҙа фермаларҙы ремонтлау, яңы һарайҙар төҙөү эше ҡыҙыу бара.



Һүрәттә: Өфө ипподромында юртаҡ аттар узышыуы күренеше.

А. Червинский фотоһы.

Уҙған йәкшәмбелә өфө ипподромында

Өфө ипподромы уҙған йәкшәмбелә бик күп халыҡ булды. Унда ат сабыштырыу сезоны асылыуы һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһы хөрмәтенә призлы ярыштар үткәрелде.

Киң майҙанға бер-бер артлы юртаҡтар һәм сабыш аттары сыға. Дүртенсе заезд. 1600 метрға аттар сабыштырыу. Алла килеп ат өсөн сезон асылыу призы. Өсәр йәшлек Дедок, Мира һәм Руль кличкалы аттар ҡатнаша.

— Мира алда! Ул 1600 метр араны 2,31 минутта үтте, уның артынан бик аҙ ғына ҡалып Руль килде. Мираға саиҡан Крайненко 150 һум, Рудла саиҡан Юмадинев 75 һум аҡса менән бүләкләнде.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһы хөрмәтенә юртаҡ аттар өсөн 1600 метрға ат сабыштырыу ярышы барҙы. Был юлы Добрыйға Юмадинев алда килде һәм уға 200 һум аҡса алды. Бертә саиҡан Николаев икенсе бүләкте алды.

Ошондай уҡ приз өсөн юртаҡ аттар узышыуында Тень һәм Арсеналь кличкалы аттар тамашасыларҙың иң иғтибарлы менән файҙаланды. Күптәр араһынан бәхетто 1600 метрҙы 2,29 минутта үтеп Тень (наездник Московский) шишкә. 200 һум бүләк аҡсаһы уға бирелә, икенсе бүләкте Арсеналь йөртөүсе Геевский алды.

Ярышта бәйгө 30 ат ҡатнашты.

Еңел атлетика буйынса ситтән торып ярышыу

Өфө ҡалаһының «Динамо» һәм «Искра» стадиондарында СССР-ҙың ҡалалары еңел атлетика буйынса ситтән торып ярыштары уҙарылды.

Ярышта беренсе урынға «Искра», икенсе урынға «Динамо» һәм өсөнсө урынға «Хеҙмәт резервтары» обществоларының спортсмендары сыҡтылар.

5 мең метр араны йүгереп үтеүҙә селекте Кривошеин («Искра»), икенсе урынды Ефремкин («Красная звезда») алдылар.

Ҡатын-ҡыҙҙар 100 метр араны йүгереп үтеүҙә «Динамо» общестоһы спортсменкаһы Полянская һәм Шабаева иптәштәр еңеүсе булып сыҡтылар.

400 метр араны йүгереп үтеүҙә иптәш Елхина еңде («Искра»).

Ядро атыу буйынса беренсе урынды спорт мастеры Павлович («Наука») алды. Икенсе һәм өсөнсө урындарҙы Воронцова менән Росте иптәштәр үҙ-ара бүлештеләр.

Бейеклеккә һикереү буйынса ҡатын-ҡыҙҙар араһында беренсе урынды Полянская, диск ырғытыу буйынса беренсе урынды Антипина иптәштәр алдылар.

К. Мизгеров.

Тигеҙ иҫәп

ФУТБОЛ

Уҙған ял көндө Өфөлә «Динамо» һәм Черниковск стадионында РСФСР беренселеге өсөн футбол ярыштары булды.

Өфө ҡалаһының «Динамо» стадионында майҙандың хужалары Молотов ҡалаһының Киров исемендәге завод футболистары менән осраштылар. Уйындың тәүге артылы 3:1 иҫәбе менән «Динамо» командалар файҙаһына бөттө. Ярыштың икенсе таймында уйын тигеҙләнеп 3:3 иҫәбе менән тамамланды.

Черниковск ҡалаһының Гостелло исемендәге стадионында Черниковск футболистары Свердловскиҙың «Динамо» командаһы менән уйнанылар. Ярыш 1:1 иҫәбе менән тамамланды.

И. Гершов.

Башҡорт Академия драма театры Бөзәяҙ районында

Бөзәяҙ районы культура йорто залы ике көн тамашасылар менән тулы булды. Унда Башҡорт Академия драма театры артистарынан бер группа район хеҙмәтсәндәренә Кальдерондың «Мөхәббәт менән шаярмайҙар» һәм И. Абдуллиндең «Йәмле Ағиҙел буйҙары» тигән пьесаларын күрһәтте. Тамашасылар уларҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар.

РСФСР һәм БАССР-ҙың халыҡ артисе Ә. Зәбиров, РСФСР-ҙың атҡаҙанған һәм БАССР-ҙың халыҡ артистары Ғәлимов һәм Барамышев, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Бикташева, артистарҙан Әхтәмова, Сөләйманов, Вахитов иптәштәр үҙ ролдәрен айырыуса яҡшы башҡарҙылар.

Бөзәяҙ районы хеҙмәтсәндәре театр коллективына рәхмәт белдерҙеләр һәм йышыраҡ килеүҙәрен һоранылар.

Ш. Сәетов.

Халыҡ демократияһы илдәренең хеҙмәтсәндәре М. И. Калининдең үлеүенә биш йыл тулыуҙы билдәләйҙәр

СОФИЯ, 3 июнь. (ТАСС). Болгарияның бөтә матбуғаты Совет государствоһының һәм большевиктар партияһының күренекле деятеле Михаил Иванович Калининдең үлеүенә биш йыл тулыуҙы билдәләне.

М. И. Калининдең бөтә тормошо, тип яҙа «Работническо дело» газетаһы, хеҙмәтсәндәрҙе капиталистик ҡоллоҡтан азат итеү эше менән өҙөлкһеҙ бәйләнгән. Ул совет халҡының бөйөк юлбашсылары — В. И. Ленин менән И. В. Сталиндең шәкерте һәм тоғро соратнигы булды. Улар менән ҡулға-ҡул тотоношоп, М. И. Калинин большевиктар партияһын төҙөнө. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһын әҙерләүҙә һәм тормошҡа ашырыуҙа актив ҡатнашты, Совет государствоһын төҙөүҙә етәкселек итте, партия һәм халыҡ дошмандарына ҡаршы, ленинизм тантанаһы өсөн арымай-талмай көрәште.

* * *

БУДАПЕШТ, 3 июнь. (ТАСС). М. И. Калинин иҫтәлегенә Венгрия газеталары редакцион мәҡәләләр арнанылар. Совет халҡы һәм бөтә прогрессив кешелек, тип яҙа «Непсава» газетаһы, М. И. Калининде үҙ социалистик Тыуған иленең ялҡынлы патриоты итеп, коммунизм өсөн ҡаҡшамаҫ көрәшсе итеп, үҙ халҡының тәрән аҡыллы етәксеһе һәм һөйөп тәрбиәләүсеһе итеп белделәр. Совет йәштәрен тәрбиәләгән Калининдең гүзәл фекерҙәре һәм идеялары хәҙерге көндә лә йәшәйҙәр. Улар большевистик агитация һәм пропаганда арсеналында мөһим урын алып торалар һәм әлеккесә халыҡты өйрәтәләр.

* * *

ТИРАНА, 3 июнь. (ТАСС). Албания телеграф агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Албанияның бөтә газеталары ла М. И. Калининдең үлеүенә биш йыл тулыуға мәҡәләләр арнағандар.

Михаил Иванович Калининдең тормошо, тип яҙа «Башкими» газетаһы, Тыуған илгә һәм халыҡҡа фиҙакәр, бирелеп һәм намыҫлы хеҙмәт итеүҙең гүзәл өлгөһө булып тора. Күренекле кеше тураһында яҡшы иҫтәлек совет халҡын һәм бөтә прогрессив кешелекте М. И. Калинин үҙенең бөтә тормошон бирген эш өсөн, — коммунизмдең тамам еңеүе өсөн тағы ла киңкенерәк көрәшкә рухландырә.

Беҙҙең халҡыбыҙ Калининдең үлеүенә биш йыл тулыу көнөндә уны беҙҙең халҡыбыҙға яңы бәхетле тормошто төҙөүҙә, беҙҙең илебеҙҙә социализм төҙөүҙә ҡиммәтле ярҙам күрһәткән Советтар иленең күренекле деятелдәренең береһе итеп хәтергә төшөрә.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 3 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 3 июнда, бөтә фронттарҙа ла Корея Халыҡ армияһының частәре, Ҡытай добровольцтәренең отрядтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, дошмандың контратакаларын уңышлы кире ҡағыуҙы һәм уға йәнле көстә, техникала ҙур юғалтыуҙар яһауҙы дауам иттерәләр, тип хәбәр итте.

Үҙәк фронтта Халыҡ армияһының частәре Поньчхонь (Ренсен) районында ҡаты һуғыш алып барыуҙы дауам иттерәләр.

Өҫтәмә мәғлүмәттәргә ҡарағанда стрелоктар — самолеттарға атыусылар 2 июнда тағы ла дошмандың 6 самолетын атып төшөргәндәр.

Американың бала үлтереүселәре

ПХЕНЬЯН, 3 июнь. (ТАСС). Корея матбуғатының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Америка самолеттары Корея Халыҡ армияһының тылына шартлатҡыс нәмәләр тултырылған төрлө әйберҙәр, — бәләкәй миналар ташлайҙар. Улар, нигеҙҙә балалар уйынсыҡтары, авторучкалар һәм башҡалар. Улар, балалар алырҙар, тигән иҫәп менән ташланалар.

Америка агрессорҙарының был яңы енәйәтен күргән Ли Ен Се ошоларҙы һөйләне:

Бер ваҡыт мин Кәньяк Пхеньян провинцияһының Суньань өйәҙендә булған ваҡытта Америка самолеттары был районда бик күп һаҡла ниндәйҙәр ваҡ нәмәләр ташланылар. Улар ерге төшкәс автоматик ручкалар һәм балалар уйынсыҡтары булып сыҡтылар.

Минән алыҫ түгел урында балалар уйнай ине. Малайҙарҙың береһе авторучканы алды һәм уны бора башланы. Шартлау тауышы ишетелде һәм малай шунда уҡ үлде. Америка «уйынсыҡтарын» алған күп кенә балалар ошолай уҡ һәләк булдылар.

Халыҡ армияһының саперҙары был «авторучкаларҙың» һәм «уйынсыҡтарҙың» шартлатҡыс нәмә менән тулы булыуы һәм уларҙы тотоу менән шартлауҙарын *асыҡланылар. Ошондай уҡ шарт*латҡыс нәмә тултырылған «балалар уйынсыҡтарын» Америка самолеттары Пхеньянға, Моранбон тауы районына һәм Хичхонь, Синьыйчжу, Нонбель һәм Вонсан ҡалаларына ла ташланылар. Америка үлтереүселәре ҡулынан Кореяның меңәрләгән балалары һәләк булды һәм зәғифләнеп ҡалды.

Даллестең Англияға килеүе

ЛОНДОН, 3 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Япония менән сепарат ярашыу договорына ҡарата Англияның хөкүмәт кешеләре менән һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн Трумэндең махсус вәкиле Джон Фостер Даллес 3 июнда Лондонға килгән.

Даллес Франция премьер-министры менән шул уҡ мәсьәләне тикшереү өсөн киләһе аҙнала Парижда булырға иҫәп тотоуын белдергән.

В. И. Ленин әҫәрҙәре[...] икенсе томы венгер телендә

БУДАПЕШТ, 3 июнь. (ТАСС). [...] издательствоһы В. И. Ленин әҫәр[...] икенсе томын венгер теленә тәржә[...] баҫып сығарҙы. В. И. Ленин [...] Венгрияла дүртенсе совет баҫма[...] ҙында сығарылалар.

Икенсе том, беренсе том кеүек [...] мең данала баҫылып сыҡты.

Болгарияла титосы шпиондар-диверсанттар эше буйынса процесс[...] тамамланыуы

СОФИЯ, 3 июнь. (ТАСС). 3 [...] фия судында Болгарияла хәрби[...] титосы шпиондар-диверсанттар [...] һының эше буйынса процесс тамам[...]

Ғәйепләү телмәре менән сығыш [...] ған прокурор П. Петрянский, был [...] серьез политик һығымталар яһау [...] каплеген бирә, тип билдәләне, [...] кликаның Болгария Халыҡ республика[...] на ҡаршы үҙенең емертеү эшендә [...] Костов бандаһына ғына түгел, [...] Балканда киң йәйелдерелгән сит и[...] тураһында ла таянғанлығы асыҡлан[...] не ул. Был сит ил агентураһы хал[...] мократияһы илдәрен социализм юл[...] айырып алыуҙы һәм уларҙы Совет[...] Союзына ҡаршы һуғыш плацдар[...] әүерелдереүҙе үҙ алдына бурыс итеп [...] ған.

Хөкөм ителеүсе Асен Мадов Ми[...] ың юғары язаға—атылыуға, милкен [...] һынса конфискациялауға хөкөм [...] Хөкөм ителеүсе Герасим Киров М[...] 10 йылға төрмәгә ябылыуға һәм [...] Михайлов Тодоров 5 йылға төрмә[...] лыуға хөкөм ителде.

Германия демократик республикаһында халыҡта[н] һорау алыу

БЕРЛИН, 3 июнь. (ТАСС). Герма[ния] Демократик Республикаһында һәм Бер[лин]дең демократик секторында 3 июнд[а] таңғы 8 сәғәттә халыҡтан һорау алыу [баш]ланды. Немец халҡының тараҡ[...] «Германияны ремилитаризациялауға [ҡар]шы һәм 1951 йылда уҡ Германия [менән] ярашыу договорын төҙөү өсөн һеҙ [...] яҡлыһығыҙмы?» тигән мәсьәлә [...]

Халыҡтан һорау алыу өс көн дауа[м итә]сәк.

Германия Демократик Республика[һы]ның хеҙмәтсәндәре тыныслыҡ өсө[н, бө]төн немец халҡының тыныс һәм бәхет[ле йә]ләсәге өсөн көрәшкә, үҙ илдәрен[...] тыныс демократик төҙөлеш эшенә [...] производство уңыштары менән [...] ылар.

Бранденбург ҡорос иретеү заво[д...] эшселәре тауыш биреү өсөн [...] килеп, халыҡтан һорау алыу [...] беҙ яңы, иҫәп буйынса етенсе март[...] йесен срогынан алда ике ай элек [...] плуатацияға тапшырҙыҡ, тип [...] менән белдерҙеләр.

Республиканың күп кенә ҡалалар[ын]да көндөҙгө 11 сәғәткә ҡәҙәр [...] 30 процентҡа саҡлы тауыш бирҙе.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Колхоз ауылында

СӘСЕҮ ТАМАМЛАНҒАС

Фәхриев кистән, йоҡоһоҙ үткән төндәрҙең үсен бер юлы алырҙай булып, тыныс һәм оҙаҡ итеп йоҡларға иҫәп тотҡайны. Ләкин, өйрәнелгән ғәҙәт буйынсамы, ул бөгөн дә иртә таңдан уҡ уянды. Тәмле йоҡоно көслап булһа ла дауам иттермәксе булды. Күҙҙәрен йомоп, степалағы сәғәттең бер иштм менән туҡтауһыҙ һуҙылыуын ишетмәҫ өсөн ҡолағын мендәр менән дә ҡаплап ҡараны, шулай ҙа уны йоҡо алманы.

Көнөн һорап килгән бригадирҙар правлениела көтөп ултыралар кеүек, сәсеүҙе тамамлау тураһында ВКП(б) райкомы менән район Советы исполкомына рапорт бирелһә лә, телефондан шылтыратып, колхоздағы хәлдәрҙе һорашырҙар һымаҡ булып тойолдо уға.

Шулай ҙа әлеккә кеүек ашыҡмаңы ул бөгөн. Иренеп кенә кейенде лә, тәмле итеп сәй эсте. Унан һуң ғына атлап правлениеға табан юнәлде. Ҙур эш башҡарғандан һуң ирекен һулыш алыу кеүек ине был көн. Киса һуңғы культураларҙы сәсеү тамамланды. Бөгөн бөтә колхозсылар ҙа ял иттеләр. Ә иртәгә тағы ла эшкә.

Бухгалтерияла счет төймәләренең тауыштары ла ишетелмәй. Фәхриев бында өҫтәл артында, тәрән тынлыҡҡа күмелеп, иҙәр эшен ултырған парторг Баҡировты ғына осратты.

— Һин көнсәге кеүек бик иртә ҡуҙғалғанһың, Вәли ҡустым, — тине Фәхриев парторг менән иҫәнләшеп ҡул биреп[...].

— Бына, Миңнеәхмәт ағай, — тине Вәли, — бөгөн ял көнөнән файҙаланып, партия хужалығын тәртипкә килтермәксе булдым. Был арала иң ҡыҙыу булды бит. Бөтә халыҡ сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, сифатлы тамамлау өсөн ҡыҙыу эш алып барғанда, үҙегеҙ белгәнсә, кабинетта ултырырға тура килмәне. Шул арала ғына эш тә күбәйеп киткән.

— Эйе, ҙур эш башҡарылды. Артель члендәре тырышып эшләнеләр, юҡһа өс мең гектарға яҡын һабан ашлығын иң яҡшы агротехник сроктарҙа сәсеү мөмкин булыр инеме һуң? — тип ҡеүәтләп ҡуйҙы Фәхриев парторгтың һүҙҙәрен.

Председатель менән парторг ҙур хужалыҡ-политик кампанияны уңышлы еңеп сығыуҙа эштә айырыуса ойошҡанлыҡ күрһәткән бригадаларҙы, айырым колхозсыларҙы иҫкә алдылар. Эштә булған ҡайһы бер етешһеҙлектәргә анализ яһанылар һәм кәмселектәрҙе бөтөрөү сараларын билдәләнеләр, эреләтелгән колхоздың киләсәген тикшерҙеләр. Әлектән билдәләнгән саралар тағы ла телгә алынды. Инсаф бабайҙың ишектә киң асып, өлкән йәштәге кешеләргә хас булған йомшаҡ атлап инеүенә ҡыҙғандан-ҡыҙа барған әңгәмә бүленеп ҡалды.

— Әйҙә бабай, былай, түргә үт, бына бында ултыр! тигән ягымлы һүҙҙәр менән ҡаршыланылар Инсаф бабайҙы. Һәм ул талдан матур итеп үрелгән ултырғысҡа ултырғас, уның хәлен, йомошон һоранылар.

— Йә, бабай ҡартайтмаймы? Тигән һорау бирҙе Фәхриев һөйәклә ҡарап менән бабайға.

— Ҡартайтмай. Ҡартайырға булыр ине лә, — тине Инсаф бабай тал ултырғысҡа, маһайған ҡиәфәттә серәнеберәк, — ваҡыт юҡ бит әле, эш менән булып ҡартайырға ваҡыт етмәй ҙә ҡала бит.

— Инсаф бабай колхоз өсөн ҡәҙерле кеше, — тине Баҡиров, 70 йәштә булыуына ҡарамаҫтан колхоз производствоһында актив ҡатнаша.

— Миңнеәхмәт ҡустым, — тине, — беҙҙең бригада кешеләре ағас төптәрен йомшартыуҙы ҡыҙыу-ҡыҙыу ғына бөтөрөргә лә бер нисә көн... ГЭС тип әйтәһегеҙме әле?..

— Эйе, бабай, ГЭС төҙәләшә...

— Эйе, әнә шул төҙәлештә эшләргә теләктәрен белдерҙеләр. Үҙем дә шундай ҙур төҙөлештә ҡатнашмай ситтә ҡалыу уңайһыҙ булыр тип уйлайым.

Аҡрынлап бригадирҙар, агитаторҙар һәм башҡа активистар, алдан хәбәр иткән һымаҡ, йыйнала башланылар. Башта үҙ-ара яйбай ғына башланған әңгәмә йәнле бәседәгә, унан кәңәшмәгә әүерелде.

Әлек был Тарҡаҙы ауылында «Яңы тормош» исемле колхоз ине. Былтыр сәсеүҙе тамамлағас та ул күршеһендәге «Султан» колхозы менән берләште. Эреләтелгән ауыл хужалығы артелен Сталин исеме менән атанылар. Тарҡаҙы йылғаһын ике яҡлап тополь ағастарының йәшеллегенә күмелеп ултырған был ауылдың Совет власы йылдарында ғына матурланыуы һәм культураһының сәскә атыуы бөйөк юлбашсының хәстәрлегенә нигеҙләнгән. Хәҙер бында 7 йыллыҡ мәктәп эшләй. Унда әлек батша заманында мохтажлыҡ арҡаһында уҡыуҙан мәхрүм ителгән кешеләрҙең балалары уҡыйҙар. Ауылда клуб, библиотека, врачебный пункт, сельпо, ауыл Советы һәм колхоз правлениеһе биналары былай ҙа матур ауылды тағы ла биҙәйҙәр.

Колхоз ауылы тормошоноң мул һәм культуралы булыуы тураһында һөйләй. Быныц өсөн улар бөйөк Сталинға бурыслылар. Пәрәктәр даһиға булған ҡайнар мөхәббәт менән тулы булғанлыҡтан да колхозсылар эреләтелгән хужалыҡҡа уның бөйөк исемде бирҙеләр ҙә. Сөнки Сталин ул еңеү, ул тыныслыҡ һәм халыҡ бәхете.

Хужалыҡ эреләтелгәс тормошто алға ебәреүҙә ҙур перспективалар *асылды. Ыҡ* йылғаһында көҡәтле ҙур гидроэлектростанция төҙәлә. Кирбес заводы һалына, еләк-емеш баҡсаһы булдырыла, умарталыҡ хужалығы ҙурайтыла. Һәм доход бирә торған башҡа тармаҡтар тыуҙырыла.

Был ҙур эштәрҙе еңеп сығыу өсөн эште ойоштора белергә һәм ныҡышмалы көс һалырға кәрәк. Бөгөн һәр кем үҙенең эшен киләсәктә яҡшыраҡ итеп ойоштороу тураһында фекерен әйтергә ашыға.

Трактор бригадаһының бригадиры Хөрмәт Ғәбәйдуллин:

— Беҙҙең трактористарға эш бөтөп тора әле, — тип һөйләй башлағайны ла, өсөнсө бригаданың бригадиры Ғәйфуллин уның һүҙен бүлде:

— Һин дуҫ кеше, — тине ул, Хөрмәткә, — сәсеүҙә бик яҡшы эшләнең, договор буйынса бөтә төр эштәрҙе лә ваҡытында сифатлы итеп үтәнең, бының өсөн һин маҡтанырға хаҡлыһың. Ләкин парҙы 540 гектар урынына 650 гектар һөрөп ташлағанһың, хәҙер һинең трактористарың эшһеҙ булған кеүек беҙҙең аттар ҙа эшһеҙ ҡалды.

— Нишә, планды арттырып үтәү аламамы ни? Аттарығыҙ менән башҡа эштәргә башҡарығыҙ, төҙөлеш материалдары ташығыҙ.

— Бына һин, Хөрмәт ҡустым, тегә С—80 тракторы менән төҙәлешкә бер-ике юл булһа ла урмандан бүрәнә килтереп бирһәң ине. Бына ул шәп булыр ине. Экономияға ҡалған яғыулыҡ етерлек. 5120 килограмм экономияны ҡайҙа ҡуйып бөтмәксе булаһың?

— Пар һөрөү май айының иң матур көндәрендә башҡарылды. Уларға хәҙер үлән үҫергә бирмәҫкә кәрәк, Хөрмәт ҡустым, культивациялап, йомшартып торорға кәрәк, — тине Фәхриев, — хәҙер утауға һәм бесәнгә төшкәнсе ГЭС төҙәлешен көсәйтеп ҡалһаҡ бик аҡшы булыр ине. Унан уңыш йыйнау *эше башланыр. Эшсе көсөнөң бушыраҡ* саҡытында ыратып ҡалмаһаҡ, көҙгә электростанцияны ходҡа ебәреүе ауырыраҡ булыр бит, ә станцияны быйыл бер нигә ҡарамаҫтан, ебәрергә кәрәк, сөнки хәҙер электр энергияһынан башҡа йәшәү мөмкин түгел.

Колхоз юғары урожай алыу өсөн тәүге эште генә башҡарған. Артель члендәре хәҙер сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе өлгәлә ойоштороу һәм ауыл хужалығы йылының ҡалған этабын уңышлы тамамлауға өлгәшеү тураһында һүҙ алып баралар. Унда сәсеү майҙаны бәләкәй түгел, тиҡ бойҙай ғына 1340 гектар тәшкил итә. 850 гектар арыш, һоло һәм башҡа культуралар бар.

— Урожай хеҙмәтте йәлләмәй һалып тәрбиәләгәндә һәм юғалтыуһыҙ йыйнап алғанда ғына була ул, ти парторг иптәш Баҡиров. Хеҙмәтте күп талап иткән техник культураларҙы ла онотторға ярамай. Үткән йыл ҡарап үҫтергәс тиҡ етендән генә 90 мең һум доход алдыҡ бит. Тәмәкенән, йәшелсәнән килгән килемдәрҙе бергә ҡушҡас күпмә булды...

Парторг эштә ойоштороу, социалистик ярышты йәйелдереү һәм был өлкәлә агитаторҙарҙың бурыстары тураһында һөйләне. Уны бик ихлас тыңланылар.

Иҫәнсе көндә иртә таңдан уҡ бөтә урында ла ҡыҙыу эш башланды. Берәүҙәр ГЭС-тың дамбаһын күтәреү өсөн ер ҡаҙыйҙар, ҙур-ҙур таштарҙы аҡтаралар. Икенселәр Ыҡ йылғаһының ике яҡ ярында бағаналар ултырталар, балта оҫталары бүрәнәнән бура бурайҙар. Автомашина эҙләкһеҙ төҙәлеш материалдары ташый. Ауылдан алыҫ түгел, Пырғын шишмә буйындағы кирбес заводы төҙәлешендә эш ҡайнай ине. Тимерлектә, буласаҡ мул урожайҙы йыйнау өсөн, ауыл хужалығы машиналары ремонтлана башланы. Бөтә ҙур хужалыҡ эш менән мәшғүл!

И. Нигмәтуллин.

Йәрмәкәй районы.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Рус драма театрында — «БОЛЬШ[...] ГРАНИЦА», кисә 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә»—«БУЙЫНМАҒАН [...]

Матросов исемендәге кинола — [...] дәү, «ЗОЛУШКА», кис «МӘСКӘҮ[...] АЛЫҪТА».

«Иҙелдә» — төҫлө фильм «БОҘ ӨҪТ[...] ДӘ ЯҘ».

СССР Министрҙар Советы 195[1] йылдың 30 апрелендәге 6500-Р [...] мерле бойороғо менән СССР Фин[анс] министерствоһына I һәм II груп[па]лағы инвалидтарҙың ҡатыһынд[...] СССР-ҙың буйҙаҡ, аҙһыҙ һәм [...] семьялы граждандарына һалынған налогты түләүҙән бушатырға рөх[сәт] итте.

Быға ярашлы рәүештә СССР Ф[и]нанс министерствоһы эшләгән пре[д]приятиеларында, учреждениеларын[да] һәм ойошмаларҙа налог һалынған [I] һәм II группалы инвалидтарҙы [...] тыуҙарын 1951 йылдың апр[ель] айында эш хаҡы буйынса түлән[...] налогты тотоу срогынан башлап, [...] районлап-тура финанс органдары та[...] рынан налог һалыныусыларҙа[н] — СССР Министрҙар Советының 195[1] йылдың 30 апрелендәге бойоро[ғон] баҫып сығарыу көнөнә ҡәҙәр [...] ләү сроктарынан башлап (был н[...] буйынса уларҙа булған недоим[ка]ларҙы бергә ҡушырға) СССР-ҙ[ың] буйҙаҡ, аҙһыҙ һәм аҙ семьялы гра[ж]дандарына һалынған налогты [түлә]ләүҙән бушатырға финанс орган[да]рына күрһәтмә бирҙе.

Башҡорт АССР-ы Фин[анс] министерствоһы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П 04322 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы Тиражы 25000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№ 110(8827)
1951 йыл
6
ИЮНЬ
шаршамбы

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттаре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

Кисә Министрҙәр Советенең ҙур залында Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Верховный Советы сессияһы үҙенең эшен башланы.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаттарына ялҡынлы сәләм! Бөтә халыҡтарҙың беренсе депутаты, һөйөклө юлбашсыбыҙ Иосиф Виссарионович СТАЛИНГӘ дан!

Башҡорт АССР-ының бюджете

Кисә Өфөлә Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының өсөнсө саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы асылды. Сессия республикабыҙҙың 1951 йылға бюджетен һәм 1950 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһындағы докладты тикшерҙе.

1950 йыл — Тыуған илебеҙҙең бөтә хужалыҡ һәм культура төҙөлешендә гүзәл еңеүҙәр йылы булды. Совет халҡы, Ленин—Сталин партияһы һәм Совет хөкүмәте етәкселегендә, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ план менән ҡуйылған бөйөк бурыстарҙы уңышлы үтәне. Промышленность һәм ауыл хужалығы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә йылдам аяҡҡа баҫтырылып, һуғышҡа тиклемге кимәлен байтаҡ дәрәжәлә уҙып китте.

Тарихи еңеүҙәр менән рухланған совет кешеләре илебеҙҙә коммунизм төҙөүҙең сталинса грандиоз программаһын — Куйбышев, Сталинград һәм Каховка гидроэлектростанцияларын, Төп Төркмәнстан, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡрым каналдарын, Волга—Дон һыу юлы каналын төҙөүҙе тормошҡа ашырыу өсөн, СССР-ҙың экономик ҡеүәтен артабан күтәреү өсөн үҙ-үҙен аямай хеҙмәт итәләр.

Социалистик экономиканың туҡтауһыҙ үсеше һөҙөмтәһендә хеҙмәтсәндәрҙең матуриаль көн-күреше әленән-әле яҡшыра.

Советтар Союзы халыҡтарының берҙәм туғандаш семьяһында йәшәүсе Башҡортостан хеҙмәтсәндәре лә партияның һәм Совет хөкүмәтенең даими хәстәрлеге арҡаһында, бөйөк рус халҡының туғандарса ярҙамында, үҙ республикаһының экономикаһын һәм культураһын үҫтереүҙә ғәйәт ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Республикабыҙҙың промышленносы һәм ауыл хужалығы һуғыштан һуңғы ҡыҫҡа ғына осор эсендә бик тиҙ аяҡҡа баҫтырылып, йылдам темптар менән үҫә. Верховный Совет ҡарауына һәм раҫлауына индерелгән БАССР-ҙың үткән йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында отчет һәм 1951 йылға бюджете быны асыҡ һауҙаләндерә.

Совет Башҡортостаны юғары уҡыу йорттарының, урта һәм башланғыс мәктәптәрҙең, библиотекалар, культура йорттары, кинотеатрҙар, клубтар, музейҙар, ғилми-тикшеренеү учреждениеларының киң селтәре менән солғап алынған. Республикала бик меңдән ашыуыраҡ башланғыс һәм урта мәктәп иҫәпләнә. Уларҙа алты йөҙ меңдән артығыраҡ бала уҡый. Унларса юғары уҡыу йорттары һәм ғилми-тикшеренеү институттары бар. Улар халыҡ хужалығына юғары квалификациялы һәм ғилми кадрҙар етештерә. Башҡорттарҙан күп кенә фәндәр докторҙары һәм кандидаттары үҫеп сыҡтылар.

Әле күптән түгел генә СССР Министрҙәр Советы республикабыҙҙа СССР фәндәр Академияһының филиалын булдырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Был башҡорт халҡының тормошонда ҙур тарихи ваҡиға булып тора. Ул Башҡортостандың экономикаһы үҫеүе өсөн һәм башҡорт халҡының йөкмәткеһе яғынан социалистик, формаһы яғынан милли культураһының артабанғы сәскә атыуы өсөн ҙур перспективалар аса. Быларҙың бөтәһе лә беҙҙең, Совет социалистик илебеҙҙә ленинсе-сталинсы милли политиканың бөйөк ҡаҙанышы булып тора.

Башҡорт АССР-ының 1951 йылға бюджете республикабыҙҙың халыҡ хужалығын һәм культураһын артабан үҫтереүҙе, хеҙмәтсәндәрҙең көн-күрешен тағы ла юғарыраҡ күтәреүҙе билдәләй. Ул 1951 йылғы халыҡ хужалығы планына ярашлы итеп төҙөлгән. Быйылғы бюджет доходтар һәм расходтар буйынса 966.669 мең һум суммаһында билдәләнә.

Промышленность, ауыл хужалығы, коммуналь-торлаҡ төҙөлешенә, төҙөкләндереү эшенә средстволар һалыу үткән йылға ҡарағанда байтаҡ арта. Социаль-культура сараларын финансировать итеүгә 794 миллион һум ассигнование бирелә. Социаль-культура саралары расходтары бюджетта ҡаралған бөтә расходтарҙың 82 процентын тәшкил итә.

Халыҡ мәғарифенә, һаулыҡ һаҡлау сараларына, кадрҙар етештереүгә, мәктәптәр, библиотекалар, клубтар, балалар яслеләре һәм баҡсалары селтәрен киңәйтеүгә һәм тотоуға ҙур суммала средстволар ҡарала. Былар беҙҙең илебеҙҙә кешеләр тураһында даими хәстәрлек күреүҙең һөҙөмтәләре булып торалар.

Капиталистик илдәрҙә хеҙмәтсән масса аслыҡҡа, хәйерселеккә дусар ителгән. Америка-Англия кеүек империалистик илдәрҙең бюджеттәре массаны талауға, аҙыуға, яңы һуғыш тоҡандырыуға, сит ил территорияларын баҫып алыуға йүнәлтелгәндәр.

Ә беҙҙең социалистик государствобыҙҙың бюджеты — ул тыныс төҙөлеш, хеҙмәтсәндәр тормошонон һәм культураһының сәскә атыу бюджете. Ул һөйөклө Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәтен нығытыуға йүнәлтелгән.

Республика бюджетенең төп сығанағын социалистик хужалыҡтан алына торған доходтар тәшкил итә. Доходтарҙын ваҡытында индерелеүе предприятиеларҙың производство һәм финанс пландарын уңышлы үтәп барыуҙарына, продукцияның үҙҡиммәтен төшөү хаҡтарын кәметеүгә, эске резервтарҙы тулыраҡ файҙаланыуға бәйләнгән. Шуға күрә был бурыстың тулыһынса тормошҡа ашырылыуына, бюджетта ҡаралған бөтә доходтарҙың срогында индерелеүенә өлгәшергә кәрәк.

Шулай ҙа күп кенә предприятиелар, хужалыҡ ойошмалары үҙҙәренең производство-финанс күрһәткестәрен яҡшыртыуҙа етерлек көрәш алып бармайҙар әле. Сырье, материал һәм аҡса средстволарын артыҡ тотоуға юл ҡуялар. Хужалыҡһыҙлыҡты бөтөрөргә, бөтә урында ла һәм бөтә нәмәлә лә ҡыҫыу экономия режимен булдырырға кәрәк. Партия һәм хужалыҡ ойошмалары работниктәре бөйөк Сталиндең: «Халыҡ байлығының бер генә тинен дә бушҡа китмәһен өсөн тупланған резервтарҙы аңлы, иҫәпләп кенә тотоға белергә кәрәк...» тигән тәрән аҡыллы күрһәтмәһен аныҡ тормошҡа ашырырға бурыслылар.

СССР Верховный Советының ағымдағы йылда булып үткән сессияһында БАССР бюджетенең үтәлеше, бигерәк тә доходтар өлөшөнөң үтәлеше ҡәнәғәтләнмәслек булыуы ҡаты тәнҡиткә алынғайны. Ләкин шуға ҡарамаҫтан, Башҡортостан финанс органдарының эше һаман да әле түбән кимәлдә ҡалыуында дауам итә. Әлшәй, Бәләбәй, Архангель, Күгәрсен һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙа финанс эше айырыуса йомшаҡ ҡуйылған. Был райондарҙың урындағы Советтәре лә финанс планының үтәлеше барышы менән етерлек тиклем оператив һәм конкрет шөғөлләнмәйҙәр.

Республиканың финанс органдары үҙҙәренең эшмәкәрлеген ҡырҡа яҡшыртыуға, бюджетта ҡаралған бөтә доходтарҙың үҙ ваҡытында индерелеүенә һәм халыҡ хужалығы планы менән билдәләнгән сараларҙы өҙлөкһөҙ финансировать итеүгә өлгәшергә тейештәр. Хужалыҡта эске резервтарҙы тулыраҡ хәрәкәткә килтереүгә, материаль һәм аҡса средстволарын экономиялы файҙаланыуға, накоплениеларҙы күберәк биреүгә өлгәшергә, хужалыҡ ойошмаларының эшмәкәрлеге өҫтөнән контролде көсәйтергә кәрәк.

Урындағы партия, совет, профсоюз һәм хужалыҡ ойошмалары 1951 йылғы халыҡ хужалығы планын һәм бюджетте өлгөлө үтәп сығыу өсөн көрәшкә республика хеҙмәтсәндәрен тағы ла киңерәк туплларға бурыслылар.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының 1951 йылдың 5 июндәге ултырышы тураһында ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ

5 июнда, көндөҙгө 12 сәғәттә, Өфө ҡалаһында, Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының ултырыштар залында Башҡорт АССР-ының өсөнсө саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы асылды.

Депутат **Ғ. Ш. Вәлиев** тәҡдиме буйынса сессияны Башҡорт АССР-ы Верховный Советының депутаты Әхмәди Сафуан улы **Солтанов** асты.

Депутат Ә. С. Солтанов телмәренән һуң Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Председателен һәм Председатель урынбаҫарҙарын һайлауға күсте.

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Верховный Советының Председателе итеп бер тауыштан депутат Имамғәли Ғәлим улы **Нәдиров** һайланды; Председателдең урынбаҫарҙары итеп депутаттар Иван Иванович **Волков** һәм Рәйфә Кашафетдин ҡыҙы **Ғәлимова** һайланды.

Депутат **В. И. Улин** тәҡдиме менән башында И. В. Сталин торған ВКП(б) Үҙәк Комитетының Политбюроһы сессияла ҡатнашыусыларҙың көслө алҡыштары аҫтында почетлы Президиумға һайланды.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Верховный Совет ултырыштарының түбәндәге регламентен ҡабул итте.

1. Башҡорт АССР-ы Верховный Советының ултырыштары иртәнге 11 сәғәттән көндөҙгө 4 сәғәткә тиклем һәм киске 7 сәғәттән төнгө 11 сәғәткә тиклем үткәреләсәк.

2. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһының көн тәртибе мәсьәләләре буйынса докладсылар Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Председателе тарафынан раҫланалар.

3. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаттарының кәм тигәндә 20 кешенән торған һәр бер группаһы үҙенең өҫтәмә докладсыһын күрһәтә ала.

4. Докладсыларға доклад өсөн 1 сәғәт һәм йомғаҡлау һүҙе өсөн 20 минут; өҫтәмә доклад һөйләүселәргә өҫтәмә доклад өсөн — 30 минут һәм йомғаҡлау һүҙе өсөн — 10 минут бирелә.

5. Ораторҙарға беренсе тапҡыр һүҙ алған ваҡытта 15 минут, икенсе тапҡыр — 5 минут ваҡыт бирелә.

6. Шәхси белдереүҙәр һәм фактик белешмәләр яҙма рәүештә бирeләләр һәм уларҙың йөкмәткеһенә ҡарап, һис киҫекмәҫтән йәки ултырыш аҙағында Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Председателе тарафынан иғлан ителәләр.

7. Нәүбәттән тыш һорауҙар яҙма рәүештә индереләләр һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Председателе тарафынан һис кисекмәҫтән иғлан ителәләр.

8. Көн тәртибенә ҡарата һүҙ өсөн 5 минут бирелә.

9. Тауыш биреү дәлилдәре буйынса һүҙ өсөн 3 минут бирелә.

Старейшиналар Советының тапшырыуы буйынса депутат **Ш. М. Пацурия** Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ултырыштарының көн тәртибе тураһында тәҡдим индерә. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы түбәндәге көн тәртибен ҡабул итте:

1. БАССР Верховный Советының Мандат комиссияһын һайлау.

2. Башҡорт АССР-ы Верховный Советының даими комиссияларын һайлау.

3. 1951 йылға Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының бюджетен раҫлау һәм 1950 йылғы бюджеттең үтәлеше тураһындағы отчетты раҫлау. Мәсьәлә Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы тарафынан индерелә.

4. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Указдарын раҫлау. Мәсьәлә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы тарафынан индерелә.

5. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы Президиумын һайлау.

6. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Хөкүмәтен — Министрҙәр Советын төҙөү.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаттарының полномочиеларен тикшереү өсөн старейшиналар Советының тапшырыуы буйынса сығыш яһаусы депутат М. Ф. Кәримовтың тәҡдиме буйынса 9 кеше составында Мандат комиссияһы һайланды:

Мандат комиссияһының председателе — **Бикбов** Сәрүәй Шәйбәк улы.

Мандат комиссияһының члендары: **Әүелбаева** Номабикә Муллаәхмәт ҡыҙы; **Әхмәдиев** Мөхәмәт Шәйхетдин улы; **Вәлиев** Ғәлимйән Шәйхелислам улы; **Дауытова** Гөлйыһан Әхмәтғәли ҡыҙы; **Крицкая** Зинаида Ивановна; **Михайлов** Яков Ермолаевич; **Назаров** Михаил Семенович; **Хәснетдинов** Баһау Сәләх улы.

Унан һуң Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Башҡорт АССР-ы Верховный Советының даими комиссияларын һайлау тураһындағы мәсьәләне ҡарауға күсте.

Дәүләкән, Шишмә һәм Бөләүү райондары депутаттары группаһынан сығыш яһаған депутат **В. В. Любушкин** тәҡдиме буйынса Башҡорт АССР-ы Верховный Советы 9 кеше составында закондар тәҡдим итеү Комиссияһын һайлай:

Комиссия председателе — **Ҡорбанғолов** Хәби Лоҡман улы.

Комиссия члендары: **Әбделманова** Мәнәүәрә Әдел ҡыҙы; **Арсланов** Ғәбдрахман Сәүәних улы; **Әхметов** Хәйрулла Нурғәли улы; **Бәләмшин** Әхмәтйән Бәләмша улы; **Григорьев** Захар Борисович; **Камалов** Хәмис Камал улы; **Руденкова** Елена Ивановна; **Чурсин** Кузьма Гаврилович.

Бишбүләк, Йәрмәкәй һәм Миәкә райондары депутаттары группаһынан сығыш яһаған депутат **А. И. Осипов** тәҡдиме буйынса Башҡорт АССР-ы Верховный Советы 9 кеше составында Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Бюджет комиссияһын һайлай:

Комиссия председателе — **Диннмөхәмәтов** Муллағәли Арслан улы.

Комиссия члендары: **Алфеева** Вера Николаевна; **Васильев** Павел Ефимович; **Вахитов** Ғафур Шәкүр улы; **Ғәлимов** Дәүләт Ғәлим улы; **Мозговой** Василий Емельянович; **Ососкова** Ксения Афанасьевна; **Сәитов** Хәмит Шаһибәк улы; **Шәрәфетдинов** Ғафур Шәрәфетдин улы.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ултырышында ҡатнашыусылар депутат **Н. Х. Уразбахтин** тәҡдиме менән Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе депутаты Иосиф Виссарионович Сталинға ҡотлау хаты ҡабул итәләр.

Унан һуң Башҡорт АССР-ы Верховный Советы көн тәртибенең өсөнсө мәсьәләһен ҡарауға—1951 йылға Башҡорт АССР-ының бюджетен раҫлауға һәм Башҡорт АССР-ының 1950 йылға бюджетен үтәү тураһындағы отчетты раҫлауға күсте.

Был мәсьәлә буйынса башҡорт һәм рус телдәрендә доклад яһау өсөн Башҡорт АССР-ының финанс министры иптәш **С. Ф. Велисева** һүҙ бирелде.

Шуның менән Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе ултырышы ябылды.

Башҡорт АССР-ының Шаран районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, машина-трактор станциялары работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Украина игенселәре өлгөһө буйынса беҙ ауыл хужалығын артабан күтәреү өсөн социалистик ярышҡа сығабыҙ һәм түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ:

ИГЕНСЕЛЕК БУЙЫНСА

Район буйынса бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан уртаса 20-шәр центнер, шул иҫәптән 3100 гектарҙан 22-шәр, ә 2000 гектарҙан 25-әр центнер урожай алырға.

Яҙғы бойҙай буйынса — райондағы бөтә сәсеүлек майҙанының һәр гектарынан уртаса 18-әр центнер, шул иҫәптән 2400 гектар майҙандан 20-шәр центнер урожай алырға.

Һоло буйынса — бөтә сәсеүлек майҙанының һәр гектарынан 19-ар центнер, шул иҫәптән 1500 гектар майҙандан 22-шәр центнер.

Тары буйынса — бөтә сәсеүлек майҙанының һәр гектарынан 14-әр центнер, шул иҫәптән 300 гектар майҙандан 15-әр центнер.

Борсаҡ буйынса — бөтә сәсеүлек майҙандарының һәр гектарынан 17-шәр центнер.

Ҡара бойҙай буйынса — районда бөтә сәсеүлек майҙанының һәр гектарынан 13-әр центнер, Карл Маркс исемендәге колхозда — 300 гектар майҙандан 15-әр центнер.

Көнбағыш буйынса — районда бөтә сәсеүлектең һәр гектарынан уртаса 10-ар центнер, «Сәп» колхозында — 55 гектар майҙандан 20-шәр центнер.

Киндер буйынса — бөтә сәсеүлектең һәр гектарынан 7-шәр центнер орлоҡ урожайы алырға.

Картоф буйынса — районда һәр гектарҙан уртаса 180-шәр центнер урожай алырға.

МАЛСЫЛЫҠ БУЙЫНСА

Общественный малсылыҡты үҫтереүҙең 1951 йылғы государство планын: аттар буйынса—102 процентҡа, мөгөҙлө эре малдар буйынса — 102 процентҡа, һарыҡтар буйынса — 105, сусҡалар буйынса — 110, ҡоштар буйынса 101 процентҡа үтәргә. Һәр бер 100 баш инә малдан кәмендә: 65 ҡолон, 95 быҙау, 110 бәрәс, 1400 сусҡа балаһы алырға. Фуражлағы һәр бер һыйырҙан 1800 литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 3-әр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы, һәр бер тауыҡтан 70-әр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

Государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыуҙы 20 октябргә тиклем үтәргә. Һәр бер 100 гектар һөрөнтө ер майҙаны иҫәбенән 3-әр баш сусҡаны һимертергә. Общественный малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы тыуҙырырға, мал аҙыҡтары әҙерләүҙең һәм страховой запастар булдырыуҙың государство планын арттырып үтәргә. Тәбиғи болонлоҡтарҙың һәр бер гектарынан кәмендә 20-шәр центнер, күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәренең һәр гектарынан 26-шар центнер, бер йыллыҡ үлән сәсеүлектәренән — 30-ар центнер, силос культураларынан — 160-ар центнер бесән урожайы һәм малдар өсөн үҫтерелә торған тамыр аҙыҡтарынан 150-шәр центнер урожай алырға.

Малдарҙы йәйге лагерҙа тәрбиәләүҙе, көтөүлектә тәүлек әйләнәһенә йөрөтөүҙе һәм көтөүлектәрҙе рациональ файҙаланыуҙы ойоштороурға. Общественный малсылыҡты бөтә кәрәкле торлаҡтар менән тәьмин итеп, ҡышҡа әҙерләнеүҙе 1 октябргә тамамларға.

МАШИНА-ТРАКТОР СТАНЦИЯЛАРЫ БУЙЫНСА

Ужым культураларының урожайлылығын артабан күтәреүҙе тәьмин итеү өсөн пар һөрөүҙе срогынан алда үтәйәсәкбеҙ, уларҙы еңтекле тәрбиәләйәсәкбеҙ. Пар баҫыуҙары йәй буйына таҙа, йомшаҡ хәлдә торасаҡ. Ужым культураларын сәсеүҙе хөкүмәт тарафынан билдәләнгән сроктарҙа, юғары агротехник кимәлдә үткәрәсәкбеҙ.

Урожай йыйнауҙы үҙ ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ үткәрәсәкбеҙ һәм ҡамыл төптәрен йомшартыу планын үтәйәсәкбеҙ.

1952 йылдың бөтә яҙғы сәсеү майҙаны өсөн туңға һөрөүҙе һәм ҡара пар күтәреүҙе 10 октябргә тамамлаясаҡбыҙ.

Беҙ машина техникаһын юғары етештереүсәнлекле файҙаланыуҙың прогрессив методтарын — сәғәт графигы буйынса эшләүҙе киң рәүештә ҡулланасаҡбыҙ һәм шуның нигеҙендә һәр бер тракторист, комбайнер һәм машинист тарафынан смена нормаларының, пландағы заданиеларҙың үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үтәлеүенә өлгәшәсәкбеҙ.

Государствоға иген тапшырыу планын 25 сентябрҙән дә һуңға ҡалмай үтәйәсәкбеҙ. Майлы һәм техник культуралар, картоф, йәшелсәләр һәм малсылыҡ продукттары тапшырыу буйынса государство алдындағы үҙ йөкләмәләребеҙҙе срогынан алда үтәйәсәкбеҙ.

Районлаштырылған сортлы орлоҡ һалыуҙы тулыһынса үтәйәсәкбеҙ, малсылыҡты үҫтереү өсөн кәрәкле күләмдәрҙә фураж фондтары булдырасаҡбыҙ, хеҙмәт көндәренә юғары түләүҙе тәьмин итәсәкбеҙ һәм шуның менән колхозсыларҙың материаль көн-күреш кимәлен тағы ла юғарыраҡ күтәрәсәкбеҙ.

Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә, районыбыҙҙың колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре үҙҙәренә алған йөкләмәне намыҫ менән үтәүгә өлгәшерҙәр һәм үҙебеҙҙең социалистик государствобыҙҙың ҡеүәтен нығытыу һәм артабан сәскә аттырыуы эшенә үҙҙәренең вкладтарын индерерҙәр.

Йәшәһен беҙҙең аҡыллы юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ бөйөк Сталин!

Йөкләмә Шаран районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһы хөрмәтенә

Йөкләмәләр үтәлде

«Туймазыбурнефть» тресының беренсе номерлы бораулау конторaһы бораулаусылары Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһы хөрмәтенә социалистик ярышты киң йәйелдереп, ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Проходка биреүҙең май айы планы арттырып үтәлде.

Май айында Сталин премияһы лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы П. Куприянов бригадаһы яҡшы эш өлгөләре күрһәтте. Ул 66-сы номерлы скважина бораулауҙы эшләп, 45 көн эсендә проектта күрһәтелгән тәранлеккә етте.

Иптәш Алексеев бригадаһы, атаҡлы бораулау мастеры Сидоренко бригадаһы менән ярышып, 20 көн эсендә 1175 метр проходка бирҙе. Шулай уҡ Дуданов, Усов, Михайлов иптәштәрҙең бригадалары ла алған йөкләмәләрен арттырып үтәнеләр.

Бойҙай сәсеүлектәре ике ҡат уталды

Шаран районы «Сәп» колхозы (председателе СССР Верховный Советы депутаты иптәш Ҡотлушин) игенселәре юғары урожай үҫтереү буйынса социалистик йөкләмәне намыҫ менән үтәйҙәр.

Был әрләтелгән колхоздың члендары Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһының асылыуы кешен айырыуса ҙур уңыштар менән ҡаршыланылар. 700 гектар майҙанлы бойҙай сәсеүлеге ике ҡат утаиды. Ужымдарҙы утау эше күптән үк тамамланды. Хәҙер пропаш культураларҙы эшкәртеү һәм көнбағыштарҙы һирәгәйтеү эштәре ҡыҙыу темп менән бара.

Колхозда шулай уҡ мул урожайҙы йыйнауға әҙерлек эштәре лә яҡшы ойошторолған.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһының беренсе ултырышы. Һүрәттә: ултырыш залынан бер күренеш.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Республика баҫыуҙарында

Сәсеүлектәр өлгөлө тәрбиәләнә

Дәүләкән. (Телефон аша). Мәжит Ғафури исемендәге колхоз члендары Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһы хөрмәтенә социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйелдерҙеләр.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә бригадалар уңышлы һөҙөмтәләргә өлгәштеләр. 600 гектар ужым һәм 1200 гектар бойҙай сәсеүлектәре таҙа итеп утадылар. Хәҙер көнбағыш сәсеүлектәрендә рәт аралары тракторҙар менән культивацияланa.

Эштең темпы күтәрелде

Әлшәй. (Телефон аша). Ташлы МТС-ының комбайнерҙары БАССР Верховный Советы сессияһы хөрмәтенә социалистик ярышты киң йәйелдереп, комбайндар паркын урып-йыйыуға әҙерләүҙең темпын тағы ла нығыраҡ күтәрҙеләр. Ремонтсылар араһында иптәш Файзуллин етәкселек иткән бригада алда бара. Улар үҙҙәре ремонтларға тейешле булған ес комбайндың икеһен юғары сифатлы итеп ремонтлауҙы тамамланылар. Бригада члендарынан Ильясов һәм Шафиков иптәштәр смена нормаларын 110 — 120-шәр процентҡа үтәйҙәр.

Башкорт АССР-ы Верховный Совете сессияһы

Башкорт АССР-ының 1951 йылға бюджете һәм 1950 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында

Башкорт АССР-ы Финанс Министре иптәш С. Ф. ВӘЛИЕВ доклады)*

Депутат иптәштәр!

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Верховный Совет сессияһы ҡарамағына һәм раҫлауына республиканың 1951 йылғы бюджетын һәм 1950 йылғы бюджеттең үтәлеше тураһындағы отчетты тапшыра.

Беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙ халыҡтары СССР-ҙың дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планын үтәү йомғаҡтары тураһында Государство План Комитетының һәм Үҙәк Статистика Управлениеһының Белдереүен ғәйәт ҙур ҡәнәғәтләнеү һәм законлы ғорурлыҡ тойғоһо менән ҡаршыланылар. Был тарихи документтең һәр бер цифры хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө өлкәһендә, илебеҙ хеҙмәтсәндәренең материаль көн-күрешен күтәреүҙә коммунистар партияһы етәкселегендә совет халҡы өлгәшкән яңы күренекле уңыштар тураһында һөйләй.

СССР промышленносе валовой продукция етештереүҙә биш йыллыҡтың һуңғы йылында һуғышҡа тиклемге кимәлде, план менән билдәләнелгән 48 процент урынына, 73 процентҡа уҙып китте. 1950 йылда промышленность производствоһының йыллыҡ планы 102 процентҡа үтәлде, ә бөтә промышленностең валовой продукцияһы, 1949 йылға сағыштырғанда, 23 процентҡа артты.

Социалистик ауыл хужалығын үҫтереүҙә ҙур уңыштарға өлгәшелде. 1950 йылда бөртөклө культураларҙың валовой урожайы 7 миллиард 600 миллион бот тәшкил итте. Бөртөклө культураларҙың урожайлылығы буйынса биш йыллыҡ план менән 1950 йылға билдәләнелгән задание арттырып үтәлде.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың общественный малсылығын үҫтереүҙә лә серьез уңыштарға өлгәшелде.

Бөйөк Тыуған илебеҙҙең халыҡтары коммунистар партияһының ғәйәт ҙур ойоштороусанлыҡ эше һөҙөмтәһендә, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты уңышлы үтәп, ҙур энтузиазм менән коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрен тормошҡа ашыра башланылар.

Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына ваҡлап һатыу хаҡтарын ошо йылдың 1 мартынан алып үткәрелгән яңы, иҫәп буйынса дүртенсе тапҡыр, арзанайтыу беҙҙең илебеҙ экономик ҡеүәтенең туҡтауһыҙ үҫеүен һәм совет халҡының материаль көн-күрешен күтәреү тураһында партия, Хөкүмәт һәм иптәш Сталиндең арымай-талмай хәстәрлек күреүен асыҡ раҫлау булып тора.

ССР Союзы Верховный Советының икенсе сессияһы тарафынан ҡабул ителгән СССР-ҙың 1951 йылға Государство бюджеты тураһында һәм тыныслыҡты яҡлау тураһында закондар беҙҙең илебеҙҙә совет кешеләренең тырышлыҡтарының тыныс төҙөлөшкә, халыҡ массаһының көн-күрешен күтәреүгә, донъялағы иң алдынғы культураны сәскә аттырыуға йүнәлтелеүен асыҡ күрһәтәләр.

Бөйөк Советтар Союзы халыҡтарының дуҫ семьяһында Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәре лә хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә ҙур уңыштарға өлгәштеләр.

Башҡорт АССР-ы территорияһындағы промышленность һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ заданиеларын уңышлы үтәне. Башҡортостан промышленносенең бөтә продукцияһының дөйөм күләме, 1940 йылға сағыштырғанда, 4 тапҡырға тиерлек артты. Промышленность, торлаҡ-көн-күреш һәм культура төҙөлөшө йылдам темптар менән үҫте. Валовой продукция етештереү буйынса 1950 йылғы план 103 процентҡа үтәлде, 1949 йылға ҡарағанда, продукция 23 процентҡа артығыраҡ етештерелде.

ССР Союзы һәм Россия Федерацияһы Хөкүмәттәре тарафынан күрһәтелгән ғәйәт ҙур ярҙам арҡаһында республика ауыл хужалығы өлкәһендә лә байтаҡ уңыштарға өлгәште.

Республика колхоздары һәм совхоздары былтыр сәсеү планын арттырып үтәп, яҡшы урожай үҫтерҙеләр, иген тапшырыу буйынса государство планын срогынан алда үтәнеләр һәм илебеҙгә, 1949 йылға ҡарағанда, 18 миллион ботҡа артығыраҡ иген тапшырҙылар. Үҙҙәрен орлоҡ менән тәьмин итеп, колхоздар колхозсыларға хеҙмәт көндәренә, үткән йылдарға ҡарағанда, игенде байтаҡ күп бирҙеләр.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында республика колхоздары мөгөҙлө эре малдар һанын 2 тапҡырға тиерлек арттырҙылар, һарыҡ һәм кәзәләр һанын 2 тапҡырҙан ашыуыраҡҡа, сусҡалар һанын 5 тапҡырға һәм ҡоштар һанын 6 тапҡырға тиерлек арттырҙылар.

Республикала ваҡ колхоздарҙы эреләтеү буйынса ҙур эш башҡарылды, был ауыл хужалығында ҡеүәтле техниканы тағы ла рациональ файҙаланыуға һәм колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыуға булышлыҡ итәсәк.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында республика бюджетының күләме икеләтә тиерлек артты. Әгәр 1945 йылда бюджеттең күләме 480 миллион һум тәшкил итһә, ә 1950 йылда ул 946 миллион һум суммала үтәлде. Шул уҡ осор эсендә бюджет расходтары 4 миллиард һумдан артығыраҡ тәшкил иттеләр. Бынан тыш хужалыҡтың һәм культураның бөтә тармаҡтарына Союзный бюджеттән һәм Россия Федерацияһы бюджетынан ғәйәт ҙур средстволар һалына.

Быларҙың бөтәһе лә ленинсе-сталинсе милли политиканың тантанаһын, Совет Башҡортостанының экономикаһын һәм культураһын күтәреүҙә бөйөк рус халҡының туғандарса ярҙам итеүен күрһәтә.

Депутат иптәштәр! 1951 йылға бюджет проекты тураһында һөйләүҙән алда 1950 йылғы бюджеттең үтәлешен ҡыҫҡаса әйтеп үтергә рөхсәт итегеҙ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы тарафынан раҫланған республиканың 1950 йылғы бюджеты доходтар буйынса 994 миллион һум суммала һәм расходтар буйынса 946 миллион һум суммала, доходтарҙың расходтарға ҡарағанда 48 миллион һум суммаға артыҡ булыуы менән билдәләнде.

Урындағы промышленность, төҙөлөш материалдары промышленносе, коммуналь предприятиелар һәм автомобиль транспорты табыштарынан алынған отчислениелар буйынса доходтар арттырып үтәлде. Халыҡтан алынған подоходный налог, ҡоролмаларҙан налог, ер рентаһы һәм башҡа ҡайһы бер налогтар һәм йыйымдар бюджетҡа арттырылып тапшырылдылар.

1950 йылда халыҡ хужалығын финансировать итеүгә бюджеттән 89 миллион һум, социаль культура сараларына 763 миллион һум һәм государство идараһы органдарын тотоуға — 79 миллион һум бирелде.

1950 йылға республика бюджетын үтәүҙең төп күрһәткестәре бына шундай.

1951 йылға Башкорт АССР-ының бюджете

Депутат иптәштәр! Һеҙҙең ҡарамағығыҙға һәм раҫлауығыҙға индерелгән Башҡорт АССР-ының 1951 йылға бюджеты быйыл беҙҙең республика алдына ҡуйылған халыҡ хужалығы бурыстарына тулыһынса ярашлы итеп төҙөлгән.

1951 йылға Башҡорт АССР-ы бюджетының дөйөм күләме доходтар һәм расходтар буйынса 966.669 мең һум суммала проектлаштырыла. Бынан тыш 1952 йылдың 1 январына күсеүсе ҡалдыҡ 38.200 мең һум суммала күҙҙә тотола.

Республика бюджеты Министрҙар Советы тарафынан доходтар һәм расходтар буйынса 289.807 мең һум суммала һәм районлар һәм ҡалалар бюджеты 712 миллион һум суммала билдәләнелде.

Государство предприятиеларынан һәм кооператив ойошмаларҙан доходтар 310 миллион һум суммала билдәләнелә. Обороттан алынасаҡ налог государство доходтарында төп иткес урын алып тора.

Обороттан алынасаҡ налогтың бюджетҡа тулыһынса инеүе промышленность предприятиеларының производство пландарын үтәүенә, промышленность базаларының тауарҙар ташыу һәм реализациялау пландарын һәм ваҡлап һатыу тауар әйләнеше планын үтәүгә туранан-тура бәйләнгән.

1950 йылда обороттан алынған налог буйынса йыллыҡ план 100 процентҡа үтәлгәйне. Шуға ҡарамаҫтан, былтыр обороттан алынған налог планын үтәү өлкәһендә серьез етешһеҙлектәр булды.

Промышленностең ҡайһы бер базалары — Главсельбыт, Главпарфюмер, Главтабаксырье, Главрыбсбыт һәм башҡалар былтыр республикаға тауар ташыу планын үтәмәнеләр һәм обороттан алына торған налогты 20 миллион һумдан артығыраҡҡа бирел еткермәнеләр.

Был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм обороттан алынасаҡ налог буйынса пландың тулыһынса үтәү хужалыҡ ойошмалары һәм финанс органдары етәкселәренең мөһим государство бурысы булып тора.

Партия һәм хөкүмәтебеҙ ваҡлап һатыу тауар әйләнеше планын үтәүгә һәм сауҙа итеүсе ойошмаларҙың халыҡты хеҙмәтләндереүен яҡшыртыуға ҙур иғтибар бирә.

Ваҡлап һатыу тауар әйләнеше планы 1950 йылда, тотош алғанда, бөтә системалар буйынса 101 процентҡа һәм общественный туҡланыу буйынса — 103 процентҡа үтәлде. Государство һәм кооператив сауҙаның ваҡлап һатыу селтәре артты.

Ләкин, республиканың сауҙа ойошмалары тауар әйләнешен арттырыу, накопленияләр планын үтәү һәм хужалыҡ-финанс эшмәкәрлеген яҡшыртыу буйынса бөтә мөмкинлектәрҙе лә файҙаланманылар.

1950 йылда сауҙа ойошмалары бирелгән тауар фондтарын систематик алып еткермәнеләр һәм үҙаллаштерелмәгән сығанаҡтарҙан тауарҙар алыу планын кварталдан-кварталға үтәмәй килделәр.

Был фактарҙы тик халыҡтың көндәлек талаптарына ҡайһы бер сауҙа ойошмалары етәкселәренең иғтибарһыҙ ҡарауы һәм тауар әйләнеше планын үтәү өсөн ныҡышмалы көрәшкә булмауы менән генә аңлатырға мөмкин.

Шуға күрә государство сауҙаһының һәм потребителдәр кооперацияһының финанс-хужалыҡ һәм сауҙа эшмәкәрлегендә ҙур етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү Сауҙа министерствоһының, Башпотребсоюз правлениеһенең һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советтары исполкомдарының кисектергеһеҙ бурысы булып тора.

Хужалыҡ ойошмаларының табыштарынан отчислениелар бюджеттең доход өлөшөндә байтаҡ урын алып торалар. 1951 йылда накоплениеларҙең дөйөм суммаһы 80 миллион һум суммала проектлаштырыла, уның 57 миллион һумы республика бюджетына бирелә.

Производство программаларын үтәү, продукцияның һәм хеҙмәтләндереүҙең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу, материалдарҙы һәм аҡса средстволарын тотоноуҙа экономияның ҡаты режимен булдырыу накоплениелар планын һәм бюджет алдындағы йөкләмәләрҙе тулыһынса үтәүҙең мөһим шарты булып тора.

Түбән-Троицк буҫтау фабрикаһының, яҙыу машиналары заводы, ҡамыт-ыңғырсаҡ фабрикаһы, Дәүләкән аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһының һәм башҡа күп кенә коллективтар һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш йәйелдереп һәм Советтар Союзының алдынғы предприятиеларының тәжрибәһен киң файҙаланып, 1950 йылда үҙ эштәрендә серьез уңыштарға өлгәштеләр.

Ләкин алдынғы предприятиеларҙың өлгәшеүҙәре республика промышленносенең бөтә тармаҡтарының да һәм предприятиеларының да ҡаҙанышы булып әйерелмәне әле. Производствоның эске резервтарын тулыһынса файҙаланмаған, механизмдарҙы файҙаланыуҙы яҡшыртыу өсөн тейешле көрәш алып бармаған, ә ҡайһы бер ваҡыттарҙа етештереүсәнлекле булмаған расходтар иҫәбенә ҙур юғалтыуҙарға юл ҡуйыусы предприятиелар ҙа бар әле.

Накоплениелар пландарын һәм бюджет алдындағы йөкләмәләрҙе тулыһынса һәм арттырып үтәү өсөн өлкә промышленносе предприятиеларының һәм республика хужалыҡ ойошмаларының тулы мөмкинлектәре бар. Бының өсөн техниканы тулыһынса файҙаланырға, хужалыҡ иҫәбе принциптарын боҙоуҙы эш практикаһынан тамырынан алып ташларға, етештереүсәнлекле булмаған расходтарға юл ҡуймаҫҡа һәм бөтә нәмәлә экономияның ныҡлы режимен һаҡларға кәрәк.

Район промышленносе валовой продукция етештереү буйынса производство планын 1950 йылда 106 процентҡа һәм кооператив промышленность — 100,6 процентҡа үтәне.

Ләкин 1950 йылда район һәм кооператив промышленность эшендә ҙур етешһеҙлектәр ҙә булды. Предприятиеларҙың күп кенә етәкселәре, раҫланған ассортимент менән иҫәпләшмәйенсә, беренсе нәүбәттә һатыу хаҡы юғары булған изделиеларҙы етештерҙеләр.

Район промышленносе накоплениелар планын үтәмәй. Күп кенә райпромкомбинаттар зыян килтереп эшләйҙәр.

Район промышленносе предприятиеларының эшендә уңыш, башлыса, етәкселек кадрҙарҙы һайлап алыуға, район һәм ҡала Советтары исполкомдарының һәм Аҙыҡ, Урындағы промышленность министерстволарының был предприятиеларҙың эшенә етәкселек итеү кимәленә бәйләнгән.

Эш шарттары бер төрлө булған ваҡытта райпромкомбинаттарҙың эш һөҙөмтәләре төрлөсә булыу фактын нәмә менән аңлатырға мөмкин һуң? Мәҫәлән, Миәкә райместпромкомбинаты былтыр 728 мең һумлыҡ тауар продукцияһы эшләп сығарып, планды арттырып үтәне һәм 90 мең һум файҙа алды, ә Федоровка райпромкомбинаты ни бары 68 мең һумлыҡ тауар продукцияһы эшләп сығарҙы һәм 70 мең һумлыҡ зыян күрҙе.

Миәкә райпромкомбинаты түләнелгән эш хаҡының һәр бер мең һумына 3 мең һумлыҡ тауар продукцияһы алды, ә Федоровка райпромкомбинаты ни бары 1130 һумлыҡ ҡына алды.

Башпромсовет системаһының промысловой кооперацияһы валовой продукция буйынса 1950 йылғы планды 103 процентҡа үтәне, киң ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе арттырҙы һәм етештерелгән изделиелар ассортиментын киңәйтте.

Шуға ҡарамаҫтан, артелдәрҙең яртыһы тиерлек планды үтәп еткермәнеләр, етештерелгән изделиеларҙың сифаты түбән булып ҡалыуҙа дауам итә, етештерелгән изделиеларҙың байтаҡ һаны баҙарҙан тыш һатыуға китә.

Халыҡты көн-күреш яғынан хеҙмәтләндереүсе күп кенә мастерскойҙар ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләйҙәр.

Кооператив системаларҙың етәкселәре киң ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе арттырыу өсөн киң мөмкинлектәрҙе файҙаланырға һәм халыҡтың көн-күреш ихтыяждарын хеҙмәтләндереү буйынса эште ныҡ яҡшыртырға тейештәр.

Халыҡтан алынасаҡ налогтарҙан һәм йыйымдарҙан һәм бөтә төр түләүҙәр буйынса урындағы налогтарҙан отчислениеларҙың дөйөм суммаһы бюджетта 402 миллион һум итеп проектлаштырыла.

Халыҡтан алынасаҡ налогтарҙың үҙ ваҡытында һәм тулыһынса индерелеүен ойоштороу республика бюджетын уңышлы үтәүҙең мөһим шарты булып тора.

Шуны танырға кәрәк, налогтарҙы иҫәпләү һәм алыу буйынса финанс органдарының эшендә ҙур етешһеҙлектәр бар әле. Финанс органдары бөтә 1950 йылда халыҡтан средстволар туплау планын бер генә кварталда ла үтәмәнеләр. Ауылдарҙағы түләүҙәр буйынса пландар айырыуса ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәлделәр.

Айырым финанс органдарының налог законларын боҙоу, налог түләргә тейешле булған объекттарҙы иҫәпләп бөтөрмәү, льготаларҙы дөрөҫ бирмәү тураһында хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын ҡараған ваҡытта бюрократлыҡ һәм волокитаға юл ҡуйыу ваҡиғалары бөтөрөлмәгән әле.

Налог эшендәге был етешһеҙлектәр республика Финанс министерствоһының түбәнге финанс органдарының эшенә тейешенсә етәкселек һәм контроллек итмәүҙең һөҙөмтәһе булып торалар.

Башҡортостан финанс органдарының ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләүе ССР Союзы Верховный Советы сессияһында ҡәтғи тәнҡитләнде.

Планды үтәүҙә артта ҡалыусы район Советтарының финанс органдарына һәм исполкомдарына был тәнҡиттән тейешле һығымта яһарға, килеп тыуған хәлде төҙәтеү өсөн бөтә сараларҙы күрергә һәм налог түләүселәрҙең бюджетҡа тулыһынса инеүен тәьмин итергә кәрәк.

Республиканың күп кенә райондарында колхоздарҙан түләүҙәр ҡәнәғәтләнмәҫлек инәләр. Ваҡ колхоздарҙы эреләтеү айҡанлы уларҙың аҡса доходтарын арттырыу өсөн ыңғай шарттар тыуҙырыла. Урындағы Советтар, ер һәм финанс органдары һәм банк учреждениелары берләшкән колхоздарҙың финанс хужалығын нығытыуҙа максималь ярҙам күрһәтергә бурыслылар. Шул уҡ ваҡытта бюджет алдындағы аҡса йөкләмәләрен үҙ ваҡытында үтәү өсөн колхоз правлениеларының яуаплылығын күтәрергә кәрәк.

Государство заемдары һәм һаҡлыҡ кассаларына һалынған вкладтар буйынса халыҡтың бюджетҡа инеүсе аҡса һаҡлыҡтары хужалыҡ-культура төҙөлөшөнөң ғәйәт ҙур программаһын финансировать итеүҙең иң мөһим сығанаҡтарының береһе булып тора.

Тик һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында ғына ла Башҡортостан хеҙмәтсәндәре 1 миллиард 109 миллион һумлыҡ государство заемдары облигацияларын алдылар.

Совет Хөкүмәтенең ҡарары буйынса сығарылған СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство займы (1951 йылғы сығарылыш) ғәйәт ҙур политик һәм хеҙмәт күтәренкелеге обстановкаһында таратылды.

Республикабыҙ хеҙмәтсәндәре ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 334 миллион һум суммалы яңы заемға яҙылдылар.

Үҙҙәренең патриотик бурыстарын үтәп, Верховный Совет сессияһы асылыу көнөнә Баймаҡ районы колхозсылары үҙ подпискаларының 87 процентен, Бөрйән — 70 процентен, Федоровка — 65 процентен, Шишмә — 64 процентен, Бозаяҙ — 64 процентен, Өфө — 63 процентен, Дүртөйлө — 62 процентен, Саҡмағош — 58 процентен, Бишбүләк районы колхозсылары — 58 процентен аҡсалата индерҙеләр.

Ләкин Воскресен Мәсетле, Салауат, Бөрө, Әбйәлил, Асҡын, Белорет, Ғафури, Ҡыйғы, Баҡалы, Зианчура, Иглин, Матрай, Благовещен, Байҡыбаш һәм башҡа ҡайһы бер район Советтарының исполкомдары бюджетте үтәү өсөн заем средстволарын срогынан алда йыйныуҙың әһәмиәтен баһалап еткермәнеләр, һөҙөмтәлә был райондарҙа заем средстволарын йыйныу ҡәнәғәтләнмәҫлек үтә.

Финанс органдары һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтары заем облигацияларын тотоусыларҙы һәм вкладчиктарҙы хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртырға һәм халыҡ араһында массовый-аңлатыу эшен көсәйтеү юлы менән заемдар һәм вкладтар буйынса һаҡлыҡ кассаларына средстволарҙың инеүен артабан арттырыуҙы тәьмин итергә бурыслылар.

1951 йылға бюджеттән расходтары

Расходтарҙың дөйөм күләме, юғарыла күрһәтелгәнсә, 966.669 мең һум суммала билдәләнелгән.

Бөтә сығанаҡтар иҫәбенә республиканың халыҡ хужалығын финансировать итеүгә үткән йылғылағы 117 миллион һум урынына 130 миллион һум суммала аҡса билдәләнелә.

Халыҡ хужалығын финансировать итеүгә бюджеттән ассигнованиелар: промышленносҡа — 35,5 миллион һум, ауыл хужалығына — 20,6 миллион һум һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа — 15,6 миллион һум күләмдә билдәләнелгән.

Халыҡ хужалығына капитал һалымдарға 1951 йылғы план менән 42 миллион һум күҙҙә тотола, уның 35 миллион һумы бюджеттән бирелә һәм ҡалған 7 миллион һумы хужалыҡ тармаҡтарының үҙ ресурстары иҫәбенә ҡапланасаҡ.

Бирелгән средстволарҙы тулыһынса үҙләштереү, капиталь төҙөлөш планын үтәү һәм яңы объекттарҙы эксплуатацияға тапшырыу министерстволарҙың, управлениеларҙың һәм ҡала, район Советтары исполкомдарының мөһим бурысы булып тора.

Ләкин капиталь төҙөлөш өлкәһендә серьез етешһеҙлектәр бар. Былтыр урман промышленносе яңы объекттар төҙөү һәм эксплуатацияға индереү планын үтәмәне. Торлаҡ-коммуналь төҙөлөш планы ни бары 67 процентҡа ғына үтәлде. Айырым объекттарҙы төҙөү сметанан тыш һуҙыла.

Өфө ҡала Советы исполкомы һәм ҡайһы бер башҡа ҡалаларҙың исполкомдары ҡалаларҙы төҙөкләндереүгә әле булһа насар етәкселек итәләр, Өфө ҡалаһында парктарҙы һәм скверҙарҙы кәртәләү хәҙергә көнгә тиклем тамамланмаған. Ҡаланы йәшелләндереүгә ҙур средстволар тотола, ләкин ултыртылған ағастарҙы һаҡлау тәьмин ителмәй.

Республиканың бөтә ҡалаларында ла төҙөкләндереү эшенә халыҡ һәм предприятиелар аҙ йәлеп ителәләр. Баймаҡ, Благовещен, Дәүләкән, Бөрө, Бәләбәй, Ишембай һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларында был эш айырыуса насар ойошторолған.

Коммуналь хужалыҡ министерствоһы һәм ҡала Советтары исполкомдары коммуналь объекттар төҙөүҙәге, ҡалаларҙы төҙөкләндереүҙәге етешһеҙлектәрҙе 1951 йылда бөтөрөргә һәм халыҡты коммуналь хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртырға тейештәр.

1951 йылда оборот средстволары 14 миллион һумға арта. Республиканың хужалыҡ ойошмалары ҡарамағында булған нормалаштырылған оборот средстволарының дөйөм күләме 159 миллион һум тәшкил итәсәк. Оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү, уларҙы дөрөҫ файҙаланыу һәм һаҡлау мәсьәләләре бик мөһим әһәмиәткә эйә булып торалар.

Республиканың күп кенә предприятиелары 1950 йылда оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү буйынса ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәштеләр.

Ләкин оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе лә ҡайһы бер предприятиелар файҙаланмайҙар әле, ә айырым хужалыҡ ойошмалары — һыра заводы, кондитер фабрикаһы, Башсельхозснаб һәм башҡалар былтыр оборот средстволарының әйләнешен бик ныҡ аҡрынайтыуға юл ҡуйғандар.

Республиканың күп кенә хужалыҡ ойошмаларында оборот средстволарын дөрөҫ файҙаланмауҙың, ә айырым предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа уларҙы систематик тотоноп бөтөүҙең сыҙап торғоһоҙ фактарына юл ҡуйыла.

Аҙыҡ промышленносенең районға буйһонған предприятиелары һуңғы дүрт йыл эсендә оборот средстволарын тулыландырыуға 5 миллион һум самаһы аҡса алдылар. Шуға ҡарамаҫтан, күп кенә район аҙыҡ промкомбинаттарының финанс хәле яҡшырманы һәм уларҙың ҡайһы берҙәре яңынан оборот средстволарының етешмәүен кисерәләр.

Урман промышленносе, государство сауҙаһы һәм хужалыҡтың башҡа ҡайһы бер тармаҡтары йылды күп йылдар буйына оборот средстволарының бик ныҡ етешмәүе менән тамамлайҙар.

Бөтә был фактар айырым хужалыҡ ойошмалары етәкселәренең оборот средстволарының һаҡланыуы өсөн көрәш алып бармауҙарын һәм хужалыҡ иҫәбе принциптарын боҙоуҙарын күрһәтәләр, һөҙөмтәлә был предприятиелар финанс ҡыйынлыҡтарын кисерәләр.

Оборот средстволарының һаҡланыуы һәм уларҙы дөрөҫ файҙаланыу өсөн хужалыҡ ойошмалары етәкселәренең яуаплылығын күтәрергә кәрәк.

Хеҙмәтсәндәрҙең материаль һәм культура кимәлен күтәреү тураһында большевиктар партияһының һәм Совет Хөкүмәтенең көндәлек хәстәрлеге социаль культура сараларына бюджеттән ҙур ассигнованиеларында үҙенең асыҡ күренешен таба.

Республика бюджеты буйынса социаль-культура сараларына 1951 йылға 794 миллион һум йәки бюджеттән бөтә расходтарының 82 проценты күҙҙә тотола. Был суммадан 594 миллион һум мәғариф эшенә бирелә, был, үткән йылға ҡарағанда, 30 миллион һумға күберәк тигән һүҙ.

Бюджет ассигнованиеларының үҫеүе менән бергә, мәктәптәр, библиотекалар, клубтар һәм башҡа уҡыу һәм культура-ағартыу учреждениеларының селтәре лә киңәйә.

Дөйөм уҡытыу мәктәптәрендә быйыл көҙҙән башлап 633,5 мең бала йәки 1950—1951 уҡыу йылындағыға ҡарағанда 31 меңгә артығыраҡ бала уҡыясаҡ. Мәктәптәрҙең материаль базаһы йылдан-йыл нығытыла. Дәреслектәр, уҡыу күргәҙмә пособиелар менән тәьмин итеү яҡшыра һәм уҡытыу-тәрбиә эшенең сифаты күтәрелә.

Мәғариф расходтарына государство йыл һайын ғәйәт ҙур средстволар бирә. Министерстволарҙың, управлениеларҙың, хеҙмәтсәндәр депутаттарының район һәм ҡала Советтары исполкомдарының бурысы был средстволарҙы һаҡлыҡ менән, экономиялы, максималь файҙа һәм эффект менән тотоноуҙан тора.

Былтыр күп кенә район һәм ҡала Советтарының исполкомдары уҡыусылар ҡабул итеүҙең халыҡ хужалығы планы менән билдәләнелгән һанын үтәмәнеләр һәм шул уҡ ваҡытта пландан тыш 322 өҫтәмә класс астылар, уларҙы тотоу государствоға 5 миллион һум самаһы суммаға төштө. Айырым район Советтары исполкомдары мәктәптәр эргәһендә интернаттар асыу һәм уҡыусыларҙы мәктәптәргә транспорт менән килтереүҙе ойоштороу тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр.

Күп кенә ваҡиғаларҙа мәктәптәргә ремонт яһау государство хаҡтарынан бер нисә тапҡырға юғары булған хаҡтар менән айырым кешеләр тарафынан үтәрелә.

Мәғариф министерствоһы, хеҙмәтсәндәр депутаттарының район һәм ҡала Советы исполкомдары һәм учреждениеларҙың етәкселәре бюджет средстволарын дөрөҫ булмаған һәм законһыҙ тотоноу фактарын бөтөрөргә һәм уларҙы эффектлы файҙаланыуҙы тәьмин итергә тейештәр.

Быйылғы йыл бюджетында һаулыҡ һаҡлау сараларына 190 миллион һум күҙҙә тотола.

Республиканың дауалау учреждениеларында 12 меңдән артығыраҡ больница койкаһы, 1080 фельдшер-акушерка пункты, ясляларҙа һәм башҡа күп кенә дауалау-профилактика һәм санитария-эпидемиология учреждениеларында 7325 урын буласаҡ.

Дауалау селтәрен йәйелдереү планын йыл һайын үтәмәү һәм йәшәп килгән селтәрен тейешле кадрҙар менән комплектовать итмәү һаулыҡ һаҡлау органдарының эшендә серьез етешһеҙлек булып тора.

Айырым медицина учреждениеларындағы медицина работниктарының бер үк ваҡытта ике эштә законһыҙ эшләү һәм эш хаҡтарын дөрөҫ тарификациялау ваҡиғалары бар, был, государство средстволарын бик күп артыҡ тотоноуға килтерә.

Һаулыҡ һаҡлау органдарының бурысы бюджет буйынса бирелгән средстволарҙы рациональ файҙаланыуҙан һәм халыҡҡа медицина ярҙамын күрһәтеүҙе яҡшыртыуҙан тора.

Районларҙың һәм ҡалаларҙың бюджеттәре

Ҡалаларҙа һәм райондарҙа хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөн тормошҡа ашырыуҙа хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтарының бюджеттәре бик мөһим роль уйнайҙар.

Республикабыҙҙа хәҙерге ваҡытта урындағы Советтарҙың 1367 үҙ аллы бюджеты иҫәпләнә, улар урындағы хужалыҡ сараларын һәм социаль-культура учреждениеларының ғәйәт ҙур селтәрен финансировать итергә саҡырылғандар.

Райондар һәм ҡалалар бюджеттарының күләме 1951 йылға 712 миллион суммала билдәләнелә, был республиканың бөтә бюджетының 74 процентын тәшкил итә.

Доходтарҙы уңышлы үтәү һәм мәктәптәрҙе, библиотекаларҙы, уҡыу өйҙәрен, агрономия һәм ветеринария учреждениеларын нормаль финансировать итеү һәм бюджет средстволарын файҙаланыуға ныҡлы контроль урынлаштырыу хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтарының һәм финанс органдарының мөһим бурысы булып тора.

1950 йылда күп кенә район һәм ҡала Советтарының исполкомдары бюджеттың үтәлешенә етәкселекте яҡшырттылар һәм ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәштеләр. Өфө, Ишембай ҡалалары, Әбйәлил, Бишбүләк, Бозаяҙ, Ҡандра, Ҡөйөргәҙе, Өфө һәм башҡа ҡайһы бер райондар доходтар буйынса бюджетты тулыһынса һәм арттырып үтәнеләр.

Ләкин түбәнге бюджеттарҙың үтәлешен ойоштороуҙа серьез етешһеҙлектәр бар. Айырым район Советтарының исполкомдары үҙ бюджеттарын үтәүгә тейешле иғтибар бирмәйҙәр, һөҙөмтәлә күҙҙә тотолған саралар тулыһынса финансировать ителмәйенсә ҡалалар.

Ғафури районының 1950 йылғы бюджеты доходтар буйынса 89,9 процентҡа һәм расходтар буйынса 92,5 процентҡа үтәлгән. Тик мәғариф расходтарына ғына 747 мең һум һәм һаулыҡ һаҡлауға 150 мең һум бирелеп еткерелмәгән.

Ауырғазы, Күгәрсен һәм башҡа ҡайһы бер райондар былтыр бюджеттарҙы ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәнеләр.

Күп кенә район Советтарының исполкомдары һәм финанс органдары ауыл бюджеттарының үтәлешенә насар етәкселек итәләр. Ауыл бюджеттарының үтәлешен көндәлек контроль район Советтары исполкомдарының иғтибар үҙәгендә булырға тейеш.

Депутат иптәштәр! Верховный Советтың ошо сессияһы раҫлауына тапшырылған Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының бюджеты 1951 йылға халыҡ хужалығы планы менән күҙҙә тотолған сараларҙы финансировать итергә тәьмин итә һәм республиканың халыҡ хужалығын артабан күтәреү, хеҙмәтсәндәрҙең культураһын сәскә аттырыу һәм материаль көн-күрешен күтәреү бурыстарына яуап бирә.

Халыҡ хужалығы планын һәм бюджетты уңышлы үтәү беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөү эшенә яңы вклад буласаҡ.

Шик юҡ, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре бөйөк большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте тирәһенә тығыҙ тупланған Советтар Союзының халыҡтарының туғандаш семьяһында хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә яңы ҙур уңыштарға өлгәшәсәктәр.

Совет хоҡуҡ ҡоролошонон ҡаҡшамаҫ көсө, совет кешеләренең хеҙмәт подвигтары, бар донъя әһәмиәтендәге тарихи еңеүҙәре ижадсыһы, бөйөк юлбашсы һәм уҡытыусы иптәш Сталинға иҫһеҙ-сикһеҙ мөхәббәт һәм бирелгәнлек уға залог булып тора.

*) Доклад ҡыҫҡартылып алынды.

Социалистик милкте боҙоусылар менән көрәште көсәйтергә

Общественный һәм государство милкен һаҡлау халыҡ хужалығында ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә. Хужалыҡтың ниндәй генә тармағында булмаһын, государство милкен туҙҙырыу ғына түгел, уның аҙ ғына боҙолоуына ла юл ҡуйылырға тейеш түгел. Материаль байлыҡтың боҙолоуында беҙ, бығаһенән элек, уның сифатының түбәнәйеүен, производство өсөн яраҡһыҙ хәлгә килеүен һәм шулар нигеҙендә уны тулыһынса файҙаланырға мөмкинлек булмауын күҙ алдында тотабыҙ. Оборудованиеларҙы һаҡлауҙы тейешенсә ойошторманғанда, уларға профилактик сараларҙы ваҡытында үткәрмәгәндә, теге йәки был предприятие халыҡ хужалығына бик күп зыян килтереүе мөмкин.

Илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре хужалыҡтың бөтә тармаҡтарында ла оборудованиене һәм техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу, юғалтыуҙарға ҡаршы көрәшеү, сырьё һәм материалдарға экономия яһау өсөн социалистик ярыш йәйелдерҙеләр. Улар станоктарҙы, оборудованиеларҙы һәм башҡа материаль байлыҡтарҙы үҙҙәренә социалистик һаҡлыҡҡа алалар, уларҙың хеҙмәт итеү һәм ремонт-ара сроктарын оҙайтыу өсөн көрәшәләр. Сөнки быны беҙҙән илебеҙҙең туҡтауһыҙ үҫә барған экономикаһы, халыҡ хужалығының артабанғы үҫеүе, илебеҙ культураһының сәскә атыуы талап итә. Шуның өсөн һәр бер эшсенең, инженер-техник работниктең, хеҙмәткәрҙең һәм етәксе работниктең төп бурыстарынан береһе булып бөтә материаль байлыҡты күҙ ҡараһы кеүек һаҡлау һәм уны производствола тулыһынса файҙаланыу тора.

Ләкин республикабыҙҙың ҡайһы бер предприятиеларында етәксе работниктарҙың оборудованиеларҙы һәм техниканы, бигерәк тә базаларҙа һәм складтарҙа ваҡытлыса файҙаланылмай торған оборудованиеларҙы һаҡлауға ғәмһеҙ ҡараштары ошо көнгә тиклем бөтерелмәгән әле. Күп кенә етәкселәр был мәсьәләгә тик «бармаҡ аша» ғына ҡарайҙар.

Черниковск фанера комбинатында производствонан тыш ваҡытлыса хәрәкәтһеҙ ултырған оборудованиелар, станоктар һәм башҡа шундай материаль байлыҡтар байтаҡ һанала, хәҙерге ваҡытта улар фанера производствоһында туранан-тура файҙаланылмайҙар. Ләкин комбинаттың директоры Майоров һәм баш инженеры Пелепелин иптәштәрҙең государство милкенә енәйәтсел һәм үҙ бурыстарына ғәмһеҙ ҡараштары һөҙөмтәһендә комбинатта оборудованиеларҙы һаҡлау буйынса бик ҙур тәртипһеҙлектәр йәшәй. Производствола туранан-тура ҡатнашы булмаған оборудованиеларҙы һаҡлау, уларҙы тулы тәртипкә һәм теләгән саҡта файҙаланырға мөмкин булған хәлгә индереү һәм консерва- [illegible]

һәм башҡа ҡулайламалар эшләнмәгән. Һөҙөмтәлә оборудованиеларға яҙғы һыу ағып инеү һәм ямғыр һыуҙары үтеү ваҡиғалары йыш булған. Складтар еүеш һәм бысраҡ хәлдә тотолалар.

СССР Урман һәм ҡағыҙ промышленносе министерствоһының хәрәкәт итмәгән һәм производствола ваҡытлыса файҙаланылмаған оборудованиеларҙы тәртипкә килтереү, уларҙы ремонтлау һәм производствоға индереүҙе тиҙләтеү тураһында бер нисә тапҡыр күрһәтмәһе булыуға ҡарамаҫтан, Черниковск фанера комбинаты директоры Майоров һәм баш инженеры Пелепелин иптәштәр был күрһәтмәне үтәмәгәндәр. 1950 йылда «Главфанерпром» үҙенең приказы менән Майоров һәм Пелепелин иптәштәрҙе оборудованиеларҙы һаҡлау өсөн ҡоролма төҙөргә мәжбүр иткәйне. Улар был приказ буйынса 10 көн срок эсендә Главкаға оборудованиеларҙың тотолоуын, майланғанлығын һәм еүештән һаҡланыуын тикшереү буйынса эш графигы ебәрергә тейештәр ине. Шулай уҡ был, оборудованиеларға тулы характеристика ебәреү, уларҙың фанера промышленносеның башҡа предприятиеларында файҙаланырға яраҡлығы тураһында ла белдереү Майоров менән Пелепелин иптәштәрҙең бурысы итеп ҡуйылғайны.

Шуға ҡарамаҫтан, был етәкселәр файҙаланылмаған оборудованиеларҙы ремонтлау, консервацияға ҡуйыу һәм һаҡлау тураһында ошо көнгә тиклем бер төрлө лә сара күрмәгәндәр. 1951 йылдың I кварталында ғына унарлаған оборудованиене бөрөмөгә ватылғанлыҡтан һәм емерелгәнлектән иҫәптән сығарылған. Һөҙөмтәлә государствоға меңдәрләгән һум зыян килтерелгән. Ә уларҙың ҡалған йөҙәр меңләгән һумлыҡ өлөшө комбинаттың территорияһында асыҡ һауала ташланып, тутыҡҡан хәлдә боҙолоп ята. Оборудованиеларҙың күп кенә өлөшө шулай уҡ ябыҡ урында булһа ла, тәртипһеҙ рәүештә һаҡлана. Бик күп станоктар бысраҡта, 10-15 сантиметр ергә батҡан хәлдә ултыралар.

Былай материаль байлыҡтарҙы һаҡлау һәм тәртипкә индереү өсөн комбинатҡа государство йыл һайын бик күп аҡса средствоһы бирә. 1950 йылда комбинат государствонан 303 мең һум, ә 1951 йылда 175 мең һум аҡса алған. Ләкин был средстволар консервацияға ҡуйыласаҡ оборудованиеларҙы тәртипкә килтереү һәм ремонтлау өсөн тулыһынса файҙаланылмайҙар, ә улар комбинаттың хәрәкәт итеүсе оборудованиеларын ремонтлау һәм комбинаттың башҡа кәрәк-яраҡтары өсөн тотолалар.

Беҙҙә Черниковск фанера комбинаты директоры Майоров һәм баш инженеры Пелепелин кеүек социалистик милкке «бармаҡ аша» ғына ҡараусы һәм халыҡтың [illegible]

Х. Уральский.

Ауыл Советы председателе трибунаһы

Депутаттар урожайҙы күтәреү өсөн көрәшәләр

[illegible] мәсьәлә тикшерелде. Ауыл хужалығы даими комиссияһының яҙғы баҫыу эштәре осоронда төҙөлгән эш планы ҡабул ителде һәм депутаттарҙан айырым иптәштәр баҫыуҙа эшләү өсөн яуаплы эш участкаларына беркетелде.

Ауыл хужалығы даими комиссияһының председателе депутат Ғилембаян Зәйнуллин иптәш «Совет» колхозының 3-сө баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры булып эшләй. Ул етәкселек иткән бригада яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙә, агротехник сараларҙы тормошҡа ашырыуҙа бригадалар араһында социалистик ярышта еңеүсе итеп табылды. Депутат Прокопий Сазыкин ошо уҡ колхозда агротехник булып эшләй. Ул бөтә сәсеүлек майҙанынан юғары урожай үҫтереп алыу өсөн, агротехника талаптарын тулыһынса үтәү өсөн көрәшә. Сәсеүҙең тәүге көнендә 20 гектар майҙанда бойҙай орлоғонон байтаҡ өлөшө күмделмәй ҡалғайны. Иптәш Сазыкин был участканы шунда уҡ ҡабаттан яҡшылап тырматтырҙы.

Депутаттарҙан Валентин Туйгунов, Александр Коновалов иптәштәр «Красный пахарь» колхозында баҫыу эштәрен агротехник сроктарҙа, яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн көрәшкә колхозсыларҙың иғтибарын туплай алдылар.

Беҙҙең ауыл Советы районда беренсе булып яҙғы баҫыу эштәрен яҡшы сифатлы итеп тамамланы.

Хәҙер ауыл Советы депутаттары сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерләнеү һәм мал аҙыҡтары туплау эшен уңышлы хәл итеүҙә колхозсыларға, МТС эшселәренә көндәлек ярҙам күрһәтәләр. Ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарының яңы күтәрелеше өсөн колхозсылар араһында йәйелдерелгән социалистик ярыш йөкләмәләренең үтәлешен тикшереүҙә ойоштороулар, хеҙмәтсәндәр араһында киң агит-массовый эш алып баралар.

В. Сазыкин,
Баҡалы районы Ахман ауыл Советы председателе.

Урман полосаларын эшкәртеү

Ҡарамалы Ғәбәй МТС-ы (Ҡандра районы) баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын трактор ярҙамында эшкәртә. Был, беренсенән, эштең сифатын яҡшыртһа, икенсенән, байтаҡ эшсе көсөн башҡа эштәргә күсерергә мөмкинлек бирә.

МТС план менән билдәләнелгән 100 гектар урынына 600 гектар майҙанда урман полосаһын эшкәртте.

Ғ. Ғазизуллина.

Как маңлайлы яуыз баш

(Сатирик поэма)

Ирмәк булды бер саҡ Вашингтонда —
Ҡара тап төшкән уның Аҡ Йортонда.
Өйөрмә ҡубып килде ҡала өҫтөнә,
Небоскрёбтар шул саҡ дер һелкенә.
Өйөрөлдөләр күктә ҡара болоттар,
Әйтерһең, унда уларға урын тар.
Океан ағынан килсә ел өрә,
Һәм күктә шомло ҡараҫҡы күренә.
Ҡай берәүҙәр өйҙәргә бикләнделәр,
Урамдарға сығырға шикләнделәр.
Ә берәүҙәр был хәлгә шатландылар,
Әйтерһең дә аттарға атландылар.

Ул ҡараҫҡы ниңә был яҡҡа килә,
Был ни хикмәт, кем быуын серен белә?
Күрҙеләр, күктә осоп бер таш килә,
Таш түгел дә бер ҡот осҡос Баш килә.
Баш килә шундай ҡаты, шундай ҡыҙып
Полный ход осҡан самолетты уҙып.
Шул ҡараҫҡы ҡыйпылып төштө ергә,
Килбәтһеҙ нәмә күренде һәр кемгә.
Был да микән, тиҙәр, хоҙай бәндәһе,
Нәҡ цистерна кеүек ҡауҙаһе.

Ауыҙы менән ҡарт бүрегә оҡшаған,
Теле кипкән ахыры бик ныҡ һыуһаған.
Маңлайы тап таш төрмә стенаһы,
Сәстәре — тырпайған терпе энәһе.
Ауыҙынан төшмәй йыуан сигара,
Завод торбаһындай төтөн сығара.
Йыртҡыс йәнлек төҫлө ҡаҙай күҙҙәре,
Бик күптер, ахыры, әйтер һүҙҙәре.
Бына ул ҡурҡыныс ҡараш ташланы,
Ҡалтырап, сәстәрен йолҡа башланы.

Ҡапыл шунда бик йәһәт ҡуҙғалды ул,
Аҡ Йорт эсенә инеп юғалды ул.
Унда ни булғанын бер кем белмәне:
Шатланып ҡосҡан ул Гарри Трумэнде.
Президент бик дәртләнеп киткән икән,
Үҙ ҡунағын зарығып көткән икән.
Иҫергәндәр шул саҡ атом эсеңән
Һаташтып бөткән улар икеһе лә.

* * *

Имеш, икәү ерҙе айҡап баралар,
Емерелә улар ҡулынан ҡалалар.
Ут һалалар аҫыл баҡса-гөлдәргә
Ҡайғы-хәсрәт сәсеп ерҙәр, илдәргә.
Килеп сығалар бер саҡ ҙур яланға,
Өйәм-өйәм мәйеттәр ята унда.
Ҡалҡа шунда скелеты Гитлерҙең,
Әйтерһең, көткән дуҫтары килерен.

Ташлана ул шул икәүҙең өҫтөнә
Кәрәк инегеҙ, — ти, — бында һеҙ генә.
Иртәгеһен һушҡа килеп торҙолар,
Бер үк төш күреп ҡаты ҡурҡындылар.
Көн дә үтмәй йыйылды сенаторҙар,
Һәм ҡунаҡтан ул-былды һораштылар.
Ысын күңелдән бәндәне ҡыҙғандылар,
Уның менән бары ла һыҙландылар.
Ҡай берәүҙәр йәш түгеп иланылар,
Әйтерһең дә, ас эттәр олонолар.
Тик кенә торғанда бында ут булды,
Ут булды ла, күҙ алдынан юҡ булды.

* * *

Шул ут килеп төштө Фультон өҫтөнә
Шунда ҡайтты ул тағы үҙ төҫөнә,
Югерешәләр, һәрҙә лә, абына
Бар джентельмендар уның яғына.
Рестарандар һәм кафелар бушаны.
Иҫерек баштарға ҡунаҡ бик оҡшаны.
Бар әрәм тамаҡтар бында ҡуптылар,
Кеше ите һатыусылар сыҡтылар.

Спекулянттәр, бандиттәр ҡалманы,
Килде Ку-клукс-Кландың шарлатандары.
Ҡалманы бар һәйәүселәр ялғанды,
Гангстерҙар солғанылар майҙанды.
Бары ла «мәскен» лә, «и мәскен» тиҙәр,
Ҡайҙан килдең и бәндә, һин кем тиҙәр.
Ҡуҙғала килбәтһеҙ нәмә шул заман,
Һәм уттар сәселеп китә ауыҙынан.
Тыңлағыҙым, Уинстон минең атым,
Ут менән уйнап йәшәй минең затым.

Командир булып алып ун дүрт илгә
Көнсығышҡа барҙым мин йәшлегемдә,
Туҡмалды шунда яуҙарым ҡырылды,
Бер өлөшө диңгеҙгә батырылды.
Шул көндән алып туҡтауһыҙ
һыҙлаһам
Һыҙлаһам да иҫтән сыҡты ул заман.
Ә байыҡ яуҙа боҙоп союзлыҡты,
Мин асмай торҙом икенсе фронтты.
Шатланып нимәнем еңеү көнөнә,
Палачтар ебәрҙем грек иленә.
Таныш-белештәрем минең Титолар,
Ҡулда власть менән бысаҡ тоталар.
Әй, йәмәғәт, дошман бар Көнсығышта
Советтәр әҙерләнә бит һуғышҡа.

Бик ҙур бәлә китә англо-саксларҙы
Былай торһа беҙҙе хоҙай һаҡлармы?!
Тиҡ ут менән ҡараҡ ҡаршы барырға
Коммунизм менән ҡояш ағына!
Шарлатандар ғәйрәт сәсеп торҙолар,
Ҡунаҡҡа ҡарап, ергә баш орҙолар.
Ыржайып торғанда яуыздың теше,
Килә майҙанға бер мәһабәт кеше!
Майлы комбинезон кейгән өҫтөнә
Тиң юҡ ерҙә ғәйрәтенә, көсөнә.

Ҡояш кеүек балҡый уның йөҙҙәре,
Тыуыр йылдарҙы ла күрә күҙҙәре.
Ҡаралып ярылған кеслә ҡулдары,
Тау кеүектәр ҡупрәтә мускулдары.
Ҡоттары осто йыуан ҡорһаҡтарҙың
Ҡалтырай башлай уларҙың сафтары.

Джентельмендәр ишек булып аҡыра,
Ҡотҡар беҙҙе, тиҙәр алла таҡыйна.
Шылды бынан ресторан тәкәләре,
Баштарынан осто шләпәләре.
Ә берәүһе бигерәк ауыр кисергән,
Тилереп дүртенсе ҡаттан һикергән.*)
Көлөмһерәп ҙур кеше торҙо баҫып
Килде яуыз баш уға ҡаршы шашып.

Йәш алды күҙен, ҡыҫылды тындары,
Утлы суҡмарға әйләнде ҡулдары.
Һәм аяҡтары менән ергә тибеп
Ыжғырып ҡараны, аждаһа кеүек.
Ауыҙ-морононан ағыуҙар ебәрҙе,
Утлы суҡмары менән киҙәнде.

Иңә яуыз һоро шайтан таҫана,
Һикермәксе булып уның өҫтөнә.
Ләкин кеше күҙен дә һалмай уға,
Ғорур ҡарай тыуыр таңдар яғына.
Баш осонған, баш тоторған шул заман
Әйтмәгән, төймәгән һүҙе ҡалмаған.
— Һиҙмәйһеңме минең хәтәр эшемде?
Күрмәйһеңме әллә минең көсөмдө?
Яңы «тигрҙар» ебәрәм Балҡанға,
Атом бомбаһы бар минең подвалда!
Тын океанды ҡапларыҡ флотым,
Дерләтермен мин тағы донъя утын,

Япония менән Көнбайыш илдәр
Минең өсөн пушка ите бирерҙәр.
Күктә күмеп ҡоҙғондарым осорҙар,
Ерҙең үҙен ҡол итеп осорорҙар.
Хәрби базаларым ерҙе ҡамаған
Өҫтәүенә ярҙам беҙгә алданан!
Әйтә кеше: булмаҫты һин уйлама,
Яҡшылап ҡара һин яҡты донъяға!..

* * *

Күмер булып баштың йөҙө ҡаралды,
Ҡалтыранып аҡ-яғына ҡараны.
Күрә ул, сиктәр артында, ерҙәрҙә,
Ерҙең күкрәгендә бөтә илдәрҙә,
Бөйөк сафтарҙа килерәр кешеләр
Тиң булырмы ерҙә улар көсөнә!
Эшселәре килә Американың.
Иҫәпләй алмаҫһың уларҙың һанын.
Баш күрә сафтарҙың ғорур килгәнен,
Ҙур тыныслыҡ байрағы елберҙәүен.
Ут теләмәй ерҙә хеҙмәт һалдаты.

Атлай сафтарҙа бөйөк Ҡытай халҡы.
Ҡабынмаҫ һуғыш уты, түгелмәҫ ҡан,
Етәкләй был сафтарҙы Бөйөк Ватан.
Һәм донъя халҡы Советтәр Ватанын
Тыныслыҡ байрағымыҙ тип атаны.
Зәңгәр күктә осҡан аҡ күгәрсендәр
Яуыз башҡа иң үсәл дошман, тиҙәр.

* * *

Бына офоҡта болоттар таралды,
Һәм алыҫтан килеп ҡояш ҡараны.
Һоро шайтандың ауыҙы ябылды,
Ҡояшты күреп, йөрәге ярылды.
Һәм ғәрһеҙләп ҡарт ҡауҙә ауҙы ергә,
Дарыу табып булырмы һуң был сиргә?!
Һыҙлаҡлы сусҡа еңә әфәнделәр,
Тик ҡан кәрәк, ҡан булһа йәшәр, тиҙәр.
Көндәр, төндәр кеңәштеләр Аҡ Йортта
Ҡан эҙләргә Маршалл китте походҡа.
Доға ҡылып аҡсаға һәм аллаға,
Серек консервалар тейәп арбаға,
Ул Европа буйлап оҙаҡ йөрегән,
Лейбористар уның тоҙҙай ирегән.
Доллар алып килгән Янкиҙе күреп,
Мистер Эттли йорғаланды эт кеүек.
Оҙопайтыр өсөн баштың ғүмерен
Килмешәккә һатты ул халҡын, илен.
Бысраҡ табан яларға әҙер ул,
Консерваторҙан да хужа хәҙер ул.
Маршалл килеп инган Парижға ҡулап,
Бидо өсөн ул булған көткән ҡунаҡ.
Ул яуыз баштың йәшәүе хаҡына,
Үлем менән аслыҡ алды халҡына.
Унан Маршалл Босфор аша һикергән,
Төрөктәргә бәхетһеҙлек килтергән.

Пәрәй торғас килеп сыҡҡан Иранға,
Шах ойоп торған сағында имангә.
Шатлыҡ ингән икән шахтың күңеленә,
Тик бәлә килгән бар Иран иленә.
Аҡ Йортта әфәнделәр ҡотороҙолар,
Ут менән дә уйнарға тотондолар.
Инде ҡылыстар ялтырай башланы
Индонезияны тетеп ҡапланы.
Бау тағылды Югослав улдарына,
Бәлә килде Корея ҡыҙҙарына.
Аға тыныс кешеләрҙең ҡандары,
Ауыр һулай Вьетнам яландары.
Ҡайғы алды мәскен Гарри Трумэнде,
Ҡан эҙләп тултырҙы ул бар төрмәне.
Ҡуҙғатырға теләп йән дуҫы башын
Ул көсәнеп ҡараны янып, шашып.
Сикмәсе бушҡа ғазапты юҡ өсөн.
Ғонаһ менән тулған бит баштың эсе!
Был башта барҙыр ҡоҡһоҙлоҡ мең вагон,
Яуыз уйҙары булыр ун мең вагон.
Барҙыр унда бандиттең нәселдәре,
Һәм юлбаҫарҙың бысраҡ серҙәре.
Был башҡа төшкән ук һеҙҙәр һағышы,
Миллион әсәләрҙең ҡаты ҡарғышы.
Был баштың ҡот осҡос ҡанлы эшенән
Күпме яфа сиккән ерҙә кешеләр!
Ҡуй, Трумэн, ҡуй, Ачесон, булмаҫтыр,
Күтәрә алмаҫһығыҙ инде был башты.
Сиккә лә күҙ һалмағыҙ. Макартурҙар
Елкәләрен һындырып бер ҡайтырҙар.
Оптай дошманын Корея улдары,
Бәйләнер палачтың ҡанлы ҡулдары.
Унда Зоя, Матросовтар тыуалар,
Иҙге ерҙән хәшәрәтте ҡыуалар.
Илдәр буйлап терлә Эйзенхауэрҙар
Йыя алмаҫ һуғыш өсөн хәйерҙәр.

* * *

Аҡ күгәрсендәр осә күктә тулып,
Ҡыҫыла инде хәҙер баштың тыны.
«Доктор» Трумэн мәнһәү уйҙар уйланы
Гангстерҙар, сенаторҙар олоно.
Бандиттәр эт һуратенә инделәр,
Тыныслыҡ таңы тыуғанды күрҙеләр.
Ҡояшты күреп яуыз баш һелкенде.
Тик ҡояш нурын һүндереү мөмкинме!
Донъяны яҡтыртып ҡалҡыр ул ҡояш.
Ер тыныр. Үлемен табыр ошо баш.

Ғ. Ғәлиев.

*) Форрестол күҙ алдында тотола.

Намыҫлы тимерсе

Белебей. Ярыштағы «Общий труд» колхозының П. С. Лазарев иптәш күп йылдар инде тимерсе булып эшләй. Ул, үҙенең ҡарт булыуына ҡарамаҫтан, үҙ эшен яҡшы, намыҫ менән башҡара. Иптәш Лазарев, үҙенең ярҙамсыһы Андриянов менән колхоздың бөтә ер эшкәртеү ҡоралдарын һәм сәсеү машиналарын яҡшы сифатлы ремонтлап, колхозға яҙғы баҫыу эштәрен үҙ ваҡытында үткәрергә ярҙам итте.

Колхозсы, намыҫлы мастер хәҙерге көндә урожай йыйыу машиналарын ҙур дәрт менән әҙерләй башланы. 3 лобогрейка, 2 бесән йыйыу һәм бесән сабыу машиналары һәм башҡалар ремонттан сыҡты инде.

Н. Абдуллин.

„Ҡыҙыл Башкортостан“ материалдары буйынса

„Яғыулыҡты артыҡ тоталар“

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 9-сы номерында Ҡандра МТС-ында яғыулыҡ һәм майлау материалдарына экономия яһау өсөн көрәш ойошторолмауы тураһында хәбәр баҫылғайны.

ВКП(б)-ның Ҡандра район комитеты редакцияға хәбәр итеүенсә, газетала баҫылған был хәбәр райкомдың бюро ултырышына ҡуйылып тикшерелгән һәм асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ҡарата саралар билдәләнгән.

Улар тыныслыҡты яҡлайҙар

— Кем ремонтланы был моторҙы? — Машинаны ҡарағандан һуң автоинспектор шоферға ошондай һорау менән мөрәжәғәт итте.

— Автослесарь Ғәзиз Рәхмәтуллин, — тип яуап ҡайтарҙы Маркелов.

Инспектор ЗИС-те ҡарап, әйләнеп сыҡты ла, тағы ла мотор эргәһенә туҡталды. Двигателдең тигеҙ ритмда хәрәкәт итеүе уны хайран ҡалдырҙы булһа кәрәк.

Шофер Маркелов та инспекторҙың былай ентекләп тикшереүенә аптырабыраҡ китте.

— Йә, Маркелов, машинаң нисә километр юл үтте, моторҙың ҡеүәте нисек?

— Был ЗИС-тең ҡанаты ғына юҡ, иптәш автоинспектор, осорға тора! Ул капиталь ремонтһыҙ йөҙ ҡырҡ мең километр юл үтте, тағы ла егерме мең километр йөрөргә тейеш.

Инспектор тағы бер ҡат һоҡланыу, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙ һалды ла:

— Ярай, хәҙергә һау булығыҙ, китергә мөмкин! — тине Маркеловҡа.

* * *

Бынан алты йыл элек БВ — 10 — 02 автомобиленең моторына капиталь ремонт үткәреү кәрәк булды. Был ҡатмарлы, күп хеҙмәт талап итеүсе эште Ғәзиз Рәхмәтуллин үҙ өҫтөнә алыу теләген белдерҙе.

Цех начальнигы Григорий Николаевич Васильченко икеләнде. Ни эшләргә? Моторҙы ремонтларға Стряжовкамы, әллә Рәхмәтуллингәме тапшырырға?

Автогараж механигы Дмитрий Иванович Марков моторҙы Стряжовка бирергә кәңәш итте:

— Белмәйем, иптәш начальник, — тине ул, — Рәхмәтуллин йәшерәк шул әле. Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығармаҫмы икән?

Ҙур эш — ҙур яуаплылыҡ талап итә. Һәр кеше хеҙмәттә, практик эштә һынала. Мөһим задание Рәхмәтуллингә ышанып тапшырылды.

Моторҙы ремонтлау өсөн күп частар кәрәк. Эштең сифаты ла шуға бәйләнгән. Үҙ эшенең мастеры Рәхмәтуллин аптырап ҡалманы. Талап ителгән запас частарға тиҙ генә исемлек төҙәне лә, тәьминәт бүлеге начальнигына барып:

— Бына, ошо частар кәрәк, иптәш, — тине. Тиҙ кәрәк. Мин моторҙы бер аҙна эсендә ремонтлап бөтөрөргә ҡушылды. Эштә тотҡарлыҡ булмаһын. Мотор ғына түгел, трансмиссияны ла, ходовой часте лә ремонтларға кәрәк.

Запас частарҙың күп өлөшө табылды, килтерелде. Ләкин ҡайһы берҙәре юҡ ине. Эш һөйәүсән, инициативалы слесарь Рәхмәтуллин уларҙы булдырыу өсөн башҡа юлдар эҙләне.

— Рәхмәт инде, быларын килтереүегеҙгә лә. Башҡаларын үҙем эшләп ҡуйырмын, — тине ул тәьминәт бүлеге работнигына.

Рәхмәтуллин үҙенең ярҙамсылары менән ЗИС-тең моторын һүтте лә, тейешле анализ яһаны.

Түбән разрядтағы слесарҙарға эш бүлеп биргәндә, ул һәр кемдән һан өсөн генә түгел, сифат өсөн эшләүҙә иғтибар итеүҙе һораны. Әгәр ҙә берәр детални ремонтлағанда бәләкәй генә етешһеҙлек булһа ла, ҡабул ителмәйәсәген алдан уҡ иҫкәртеп ҡуйҙы. Шул уҡ ваҡытта ул слесарҙарҙан сменала 480 минут ваҡытты эштә тулыһынса файҙаланыуҙы талап итте.

Бөтәһенән дә элек, Ғәзиз Рәхмәтуллин үҙе эште төҙәл башҡарыусан. Уның эш урыны таҙа, бөтә инструменттар ҡайҙа һәм үҙ урынында, кәрәкле запас частар бар. Был алдынғы слесарь эш ваҡытын сәғәтләп түгел, минутлап бүлә, уны коммунистик общество төҙөүгә максималь файҙалана. Сменаға кәмендә бер ярым — ике норма бирмәһә, был инде Рәхмәтуллин өсөн ҙур кәмселек кеүек тойола. Сәнки транспорт цехының кешеләре заводтың башҡа цехтары араһында алдынғылыҡты алғандар, унда бөтә эшсенең дә смена заданиеһен арттырып үтәү—традицияға әйләнгән. Әле һуңғы кварталда цех коллективының ай һайын планды 190 — 218 процентҡа үтәп килеүе быны асыҡ миҫалы булып тора.

Ремонтсылар тиҙ һәм оҫта эшләү менән бергә, экономия өсөн көрәштә лә алдынғылар сафында баралар. Улар һәр автомашинаны ремонтлағап һайын бер мең—ике мең һум государство аҡсаһын экономияға ҡалдырып килеләр.

Стахановсы слесарь, иҫке МКЗ — 6 карбюраторын ремонтланы, компрессион һәм май кольцоларын үҙе яһаны. Техник контроль бүлеге был частарҙы «яҡшы» билдәһе менән ҡабул итте. Коренной һәм шатунный подшипниктар Б—83 баббитенан ҡойолдо һәм байтаҡ баббит экономияға ҡалдырылды.

ЗИС-тең моторы ремонтланып бөттө. Ләкин эштең яҙмышы алда — мотор һынап ҡаралмаған. Һынау стендында моторҙын ҡеүәтен, автолды, бензинде күпме расходлауы тикшерелде. Һөҙөмтәнең һоҡланғыс булыуы Рәхмәтуллинде тағы ла шатландырҙы. Ул үҙенең һүҙендә ныҡ торҙо: мотор юғары сифатлы итеп, срогынан алда ремонтланды. Йөҙ ҡырҡ мең километр юл үткән һәм ремонтһыҙ яңынан егерме мең километр йөрөүгә яраҡлы булған мотор бына ошо инде ул. Бөтә завод общественносе лә, цех начальнигы лә, предприятиеның етәксе работниктәре лә был башҡорт егетенең йылдам, етеҙ, намыҫлы, эш һөйәүсән, үҙ эшенең мастеры икәнлеген практик эштә күрҙеләр. Рәхмәтуллин ҡулынан үткән моторҙар һәр ваҡыт шулай яҡшы ремонтланған булалар.

Слесарь Рәхмәтуллин бынан һуң да йөҙенә ҡыҙыллыҡ килтермәне, тапшырылған һәр бер эште еренә еткереп, төҙәл үтәп килде. Уның намыҫлы хеҙмәте директор приказдарында, стена газеталарында, боевой листоктарҙа, оперативкаларҙа, докладтарҙа сағылдырылды. Ул стахановса хеҙмәт итә. Үҙенең тәжрибәһен башҡаларға күсерә. Яҡшы общественник. Слесарь Рәхмәтуллин үҙенең стахановсы хеҙмәте менән тыныслыҡ өсөн, илебеҙҙең сәскә атыуы өсөн фиҙакәр көрәшә.

* * *

Тәүге йылда Баймаҡтан Өфөгә килгәс заводта ҡайһы берәүҙәр Ғәзиз Рәхмәтуллинде эшкә алыу йәки алмау тураһында бәхәсләштеләр, һәр кем үҙенсә һүҙ йөрөттө.

Цех начальнигы ла ҡайһы берәүҙәрҙең фекеренә ҡушылды булһа кәрәк. Ул Рәхмәтуллиндең ғаризаһына ул бик йәш булғанлыҡтан: «Беҙгә эшсе талап ителмәй», тип резолюция һалып ебәрҙе.

Парткомда был егет тураһында башҡа ҡараште булдылар. Хәл үҙгәрә төштө. Бында мәсьәләгә серьёз иғтибар иттеләр. Парткомдан был йәш егетте эшкә урынлаштырырға, өйрәтергә кәрәк, тигән күрһәтмә бирҙеләр, егеттә булған ныҡышмалылыҡ уның яҡшы производственник буласағын вәғәҙә итә ине.

Рәхмәтуллин тәүге көндән алға ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү өсөн бөтә ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға тырышты. Совет хөкүмәте, большевиктар партияһы хеҙмәтсән халыҡты ҙур хәстәрлек менән солғап алды. Беҙҙең киң илебеҙҙең бөтә милләт халыҡтары эшләргә, уҡырға, белем алырға, ял итергә хоҡуҡ алдылар. Тыуған ил Рәхмәтуллин кеүек миллионлаған кешеләргә яҡты, культуралы, бәхетле тормош бирҙе.

Шатлыҡлы тормош та, эш тә ырамлы булып китте. Ғәзиз Рәхмәтуллин эшләүендә, халыҡ бәхете өсөн, тыныслыҡ өсөн хеҙмәт итеүендә дауам итте. Өфө тау оборудованиелары заводында ул туғыҙ йыл эшләү осоронда етенсе разрядлы слесарь булыуға өлгәште.

Һәм бында, заводта, Ғәзиз Рәхмәтуллин бер үҙе генәме ни? Юҡ, улар бында күптәр.

Заводта күптән түгел 36 кешегә министерство тарафынан «Социалистик ярыш отличнигы» исеме бирелде. Дирекция 54 кешене ҡиммәтле бүләктәр менән бүләкләне, 25 кешегә почет грамоталары бирҙе. Бүләкләнеүселәр араһында стахановсы слесарь Ғәзиз Рәхмәтуллин почетлы урынды алып тора. Улар араһында фрезеровщик Закиров, ҡойоу цехы начальнигы урынбаҫары Мартынова, токарҙар Петр Меньшиков, Федор Бадыновский, Рауил Киньйәкәев, Федор Шадрин, формовщик Дмитрий Осипов, тимерсе Ковин, сварщик Попов һәм башҡалар бар.

Бүмәк кес, ойошҡанлыҡ ынтай һөҙөмтәләр килтерҙе. Өфө тау оборудованиелары заводының 1940 йылға ҡарағанда продукция етештереүе 1950 йылда 190 процент, хеҙмәт етештереүсәнлеге — 142 процент тәшкил итә. Былтырғы дүрт айлыҡ производство программаһы срогынан ун алты көн алда үтәлде һәм социалистик Тыуған илебеҙгә пландан тыш йөҙәрсә мең һумлыҡ продукция бирелде. Завод коллективы май айында ла графиктан алда барҙы, ритмле эшләне.

Эшселәр, инженерҙар, техниктар, хеҙмәткәрҙәр бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн, халыҡ бәхете өсөн көстәрен дә, энергияларын да ҡыҙғанмай фиҙакәр хеҙмәт итәләр.

Улар Стокгольм Воззваниеһына ҡул ҡуйғанда, Совет хөкүмәтенең тыныслыҡ политикаһын бөтә йөрәктән яҡларға булдылар һәм һуғыш утын ҡоҙандырырға маташыусы Америка-Англия империалистарына һәм уларҙың ялсыларына ҡаршы нәфрәт белдерҙеләр.

Завод коллективы социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан күтәреү өсөн бөтә сараларҙы күрә. Ҡеүәтле совет техникаһы, бөтә эске резервтар тыныслыҡты яҡлау өсөн файҙаланыла.

Ғәзиз Рәхмәтуллин тыныслыҡты яҡлауҙа булған үҙенең тойғоһон белдереп:

— Мин былтыр Стокгольм Воззваниеһына ҡул ҡуйғандан бирле айлыҡ эш нормаһын икеләтә, унан да арттырып үтәп киләм. Алдағы көндә тағы ла етештереүсәнлерәк эшләргә һүҙ бирәм. Был минең тыныслыҡ өсөн вкладым. — ти.

Ғәзел Улмасов.

ТУҒАНДАШ РЕСПУБЛИКА АРТИСТӘРЕНЕҢ КОНЦЕРТЕ

Ике туғандаш республика — Башҡортостан менән Татарстан бер туғандар кеүек татыу һәм дуҫ йәшәйҙәр, тығыҙ ижади бәйләнеш тоталар, үҙҙәренең халыҡ хужалығы, фән, әҙәбиәт һәм искусство өлкәһендәге булған ҡаҙаныштары менән уртаҡлашалар. Быйыл йәй Ғәлиәсҡәр Камал исемендәге Татар Государство Академия драма театрының Өфөлә гастролдә булыуы ике театр араһында булған даими ижади бәйләнештең асыҡ күренеше булды. Башҡортостан тамашасылары туғандаш республиканың театрын бик йылы ҡаршыланылар. Был беҙҙең хеҙмәтсәндәребеҙҙең культура тормошонда нәүбәттәге ҙур ваҡиға булып үтте.

Ошо көндәрҙә Ғабдулла Туҡай исемендәге Татар государство филармонияһы артистәре Өфөгә килеп баш ҡалабыҙҙың хеҙмәтсәндәрен тағы ла шатландырҙылар. 2 һәм 3 июндә Рус Государство драма театрында уларҙың ҙур концерты булды. Унда Татарстандың атҡаҙанған артистәре Ф. Юсупов, Ғ. Вәлиев һәм солистәрҙән Ж. Сәләхова, С. Жәләлетдинов, Р. Ибәтуллина иптәштәр ҡатнаштылар.

Татарстандың атҡаҙанған артисы Ғәни Вәлиев баянда һәм төрлө концерт гармондарында халыҡ көйҙәрен, татар һәм башҡорт композиторҙарының әҫәрҙәрен оҫта, матур һәм ҙур темперамент менән башҡарҙы. Ул һәр бер көйҙөң йөкмәткеһен, характерын дөрөҫ, асыҡ ҡаҙаландерҙе һәм үҙенең юғары уйнау техникаһына эйә булғанлығын күрһәтте. Шуның арҡаһында ул тыңлаусыларҙа ихтирам һәм яратыу ҡаҙанды.

Татар Государство филармонияһының солисткаһы, — йырсы Жәүһирә Сәләхова тауышының матур һәм тулы яңғырауы менән залдың иғтибарын үҙенә йәлеп итте. Тамашасыларҙың алҡыштар менән ҡат-ҡат һорауҙары иптәш Ж. Сәләхованың композиторҙар әҫәрҙәрен, бигерәк тә татар халыҡ көйҙәрен көслө тойғо менән оҫта башҡарыуы тураһында һөйләйҙәр.

Художестволы һөйләү искусствоһы йәш. Ул бары тик Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына искусствоның айырым бер төрө булып урынлашты. Һәм хәҙер ул күп төрлө искусство араһында айырыуса ҙур урын алып тора. Ләкин уға татар һәм башҡорт артистәре тарафынан оло кәрәгенсә тейешле иғтибар бирелмәй килде. Татарстандың атҡаҙанған артисы Фәйзи Юсуповтың художестволы һөйләү искусствоһын алға ебәреүҙә булған ынтылышы һәм уның был өлкәлә булған ҡаҙаныштары шаҡтай ваҡиға булып тора.

Иптәш Фәйзи Юсупов концертты Нәҡи Исәнбәттең «Татарстандан сәләм» тигән поэмаһы менән башлап ебәрә. Бында тамашасылар бөгөнгө Совет Татарстанының граидиоз төҙөлештәрен, завод-фабрикаларын, ауыл-ҡалаларын, урман-тауҙарын, йылға-күлдәрен, социалистик иген ҡырҙарын, хеҙмәт ингүҙһаҙы менән яңғырап социалистик хеҙмәт геройҙарын, данлыҡлы фән, культура дентелдәрен, матур һәм геройҙарҙы Ҡаҙанды оҫта художниктең күҙ алдына килтерҙеләр. Татар халыҡ шағиры Ғабдулла Туҡайҙың «Өйләнеү түгел бәйләнеү», «Һабый ашағанда», Такташтың «Камали менән Ямаля» һәм башҡа бик күп әҫәрҙәре тыңлаусыларҙа көслө тойғо ҡалдырҙылар. Уның башҡарыуындағы һәр бер әҫәргә ваҡиғалар, персонаждар тере булып күҙ алдына баҫа.

Фәйзи Юсупов ысын мәғәнәһе менән үҙенең художестволы һүҙ оҫтаһы икәнлеген күрһәтте. Тамашасылар уны бик ҙурлап тыңланылар һәм көслө алҡыштар менән ҡаршыланылар.

Концерттың йомғаҡлауы тураһында бер нисә һүҙ әйтеп үтәйек. Уның программаһы «Сатира һәм юмор кисәһе» тигән бүлеге тулыһынса йырҙан бирелгән ине.

Һүрәттә: (уңдан һулға) Татарстандың атҡаҙанған артисы Фәйзи Юсупов, Ғәзиз Вәлиев һәм татар государство филармонияһының солисткалары — йырсы Ж. Сәләхова, бейеүсе Р. Ибәтуллина иптәштәр.

Черемнский фотоһы.
Р. Хәсәинов тексы.

Библиотека яҡшы эшләй

Өфө телефон аппараттары заводы библиотекаһының китап фонды йылдан-йыл арта бара. Хәҙер библиотекала 8 меңдән артыҡ политик, фәнни һәм художестволы әҙәбиәт китаптары бар. Быйыл тағы ла китаптар һатып алыу өсөн 8 мең һум аҡса бүленде. Уҡыу залы өсөн 15 дана «Труд», 3-әр дана «Правда», «Известия», 5 дана «Красная Башкирия», «Ҡыҙыл Башҡортостан» газеталары һәм төрлө исемдәге 17 дана журнал алдырыла. Завод стахановсылары — Сатаев, Әхтәриев, Воробьев, Башмакова, Болкова һәм башҡа иптәштәр библиотеканың актив уҡыусылары булып иҫәпләнәләр.

Библиотека мөдире иптәш Готовцева китап уҡыусылар менән эшләүҙе яҡшы ойошторҙо. Ул уҡыусыларға алынған китаптарҙы үҙ ваҡытында еткереү менән бергә, төшкө ял ваҡыттарында әңгәмәләр менән йыш ҡына төрлө темаларға бесәдәләр үҙғара.

Ә. Сәйфетдинов.

Урман эшселәре поселкаһында

Оло Теләк районы — республикала ағас әҙерләүсе эре райондарҙың береһенә әүерелде.

Хәҙер бында ағас әҙерләү эше менән шөғөлләнеүсе эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең һаны ла һәр йыл һайын, тайчылашыһыҙ үҫә бара. Һуңғы бер-ике йыл эсендә генә район үҙәгенән 80 километр алыҫлыҡта Ҡыҫыҡ эшселәр поселкаһы барлыҡҡа килде. Поселкала эшселәр өсөн стандарт типта торлаҡтар, индивидуаль квартиралар, клуб, столовой төҙөлгән.

Поселка кешеләре культуралы йәшәйҙәр. Һәр бер йортта Ильич лампалары яна, радио һөйләй.

Клуб — культура-ағартыу эштәренең үҙәге булып тора. Күптән түгел генә ошонда, электр кеше аяҡ баҫмаған ҡараңғы майҙанда, хәҙер урман эшселәре поселкаһы клубына Владимир Ильич Лениндең бюсе ҡуйылды. Уны клуб залына урынлаштырыу тантаналы шарттарҙа үткәрелде.

Клуб эргәһендә библиотека асылды, унда күптән түгел генә 841 дана политик һәм художестволы әҫәрҙәр алынды.

Р. Ғәйнуллин.

Күк һағыҙ үҫтереүҙә беҙҙең тәжрибә

Колхоздарҙы эрелəтеү айҡанлы күк һағыҙ сәсеү майҙаны ла байтаҡ артты. Был ҙур эш күләмен үҙ ваҡытында башҡарыу өсөн күк һағыҙҙы сәсеүҙән башлап бөтә эш процессен механизациялаштырырға кәрәк.

Быға тиклем күк һағыҙҙы оялап сәсеү өсөн участкаларҙы маркировкалау эше йәки ҡул менән сытәр ярҙамында, йәки ҡул һәм ат маркерҙары менән башҡарылып килде. Былай эшләгәндә рәттәр кәкре-бөкрө булды, был хәл ерҙе эшкәртеүҙә машиналарҙы һәм ҡоралдарҙы тракторға тағып йөрөтеү мөмкинлеген бирмәне.

Бындай шарттарҙа күк һағыҙ сәселә торған ерҙе эшкәртеүҙә МТС-тың ҡатнашыуы бары тик пар ерен йәки туңға һөрөүҙе башҡарыу менән генә сикләнеп ҡала килде, ә төп эш процестәре ҡул менән башҡарылды, яҡшы тигәндә, бер рәтле атлы ҡоралдар менән генә эш ителде. Ә күк һағыҙҙы эшкәртеүҙә механизацияны ҡулланмағанлыҡтан хеҙмәт көнө күп тотолоп килә.

Күк һағыҙ үҫтереү Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү институты һәм БАССР Ауыл хужалығы министерствоһы инициативаһы буйынса Мишкә районы Ленин исемендәге колхозда беҙ күк һағыҙ сәсеүҙә трактор культиваторҙары менән алдан ерҙе маркерлап сыҡтыҡ. Был тәжрибә рәт аралары 60 сантиметр ҡалдырылып 3 гектар майҙанда үткәрелде. Сәсеү маркер эҙе тирәһендә оя яһап, аралары 20 сантиметр итеп ҡул менән башҡарылды.

Ул шулай булды, хеҙмәт етештереүсәнлекле трактор маркеры менән эшләү, ҡул менән эшләүгә сағыштырғанда, 10 тапҡырға һәм, ат маркерына ҡарағанда, 3 тапҡырға артығыраҡ булып сыҡты. Трактор менән маркерлауҙы ҡулланыу арҡаһында көнөнә 10—12 гектар маркировать итергә мөмкинлек бирҙе, һәм бигерәк тә мөһиме шунда, дөрөҫ сәселгән ерҙә тәрбиәләү эштәрен күп рәтле культивация менән башҡарыу мөмкинлеген бирә. Шулай итеп, был хәл МТС-ҡа трактор культиваторы менән рәт араларын эшкәртеү өсөн шарттар тыуҙыра.

МТС өсөн маркеровкаларға культиваторҙы ҡулайлаштырыуы ауыр түгел. Быының өсөн трактор культиваторындағы эш органы — лапкаларҙы катоктар менән алмаштырыу талап ителә.

Эш органы — культиватор өсөн катоҡ ағастан яһала, түбә ҡалайы менән йәки эксплуатацияға яраҡһыҙ булған С—80 тракторының поршень гильзаһы менән уратып ҡаҙаҡлана. Бер гильзанан ос каток әҙерләргә мөмкин.

Культиватор кронштейндарена катоктар тигеҙ горизонталь майҙанға берберенән 60 сантиметр ара ҡалдырып ҡуйыла.

Трактор маркеровкаһы күк һағыҙҙы трактор культиваторы менән тәрбиәләүгә мөмкинлек бирә һәм ул күп кенә хеҙмәт көнөн экономиялау өсөн стимул булып тора.

Был тәжрибәнө күк һағыҙ сәсеү эше менән шөғөлләнеүсе бөтә колхоздарҙа ла ҡулланырға мөмкин.

М. Пономарев,
Мишкә районы Чурай МТС-ының күк һағыҙ буйынса участка агрономы.

Колхоздарҙа төҙөлөштәр

Өфө районы колхоздарында общественный биналар, өйҙәр һәм мал торлаҡтары төҙөү эштәре йәйелдерелде.

«Маяҡ» колхозында быйыл кирбес заводы, һарыҡтар һәм йорт ҡоштары өсөн торлаҡтар, иген киптергес, 2 келәт, силос башняһе, 2 урында япмалы ырҙын төҙөлә. Колхозсылар өсөн 15 яңы өй һалына. Төҙөү эшендә 25 кешенән торған бригада эшләй. Бригада инде һыйырҙар өсөн торлаҡтар төҙөнө. Сусҡалар торлағы һәм кирбес заводы төҙөлөп бөтөү алдында тора.

Хрущев исемендәге колхозда иген киптергес, 2 урында япмалы ырҙын төҙөлә. Бында быйыл шулай уҡ колхозсылар өсөн 8 өй, һарыҡтар торлағы һәм тиреҫ һаҡлағыс төҙөләсәк. Колхозда амбулатория төҙөлдө. Кирбес заводын һәм быҙауҙар торлағын төҙөү тамамланып килә.

«Заветы Ильича», «Молодая гвардия» һәм Крупская исемендәге колхоздарҙа ла төҙөү эштәре ҡыҙыу бара.

М. Баранов.

Катын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһы комиссияһының члендәрен Ким Ир Сендең ҡабул итеүе

ПХЕНЬЯН, 3 июнь. (ТАСС). Америка-Англия интервенттарының Кореялағы йыртҡыслыҡтарын тикшереү буйынса Катын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһының комиссияһы үҙ эшен тамамланы. Кореяла булыу осоронда комиссия илдең төрлө районы менән танышты, Америка агрессорҙары тарафынан яһалған йыртҡыслыҡтарҙың күп һанлы фактарын билдәләне, һәм катын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһына тапшырыу өсөн тейешле материалдар йыйҙы.

Кореянан китер алдынан комиссия члендәрен Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының министрҙар кабинеты председателе Ким Ир Сен ҡабул итте. Ҡабул итеүҙә Корея демократик катын-ҡыҙҙары союзы президиумының председателе Пак Ден Ай ҡатнашты.

Комиссия председателе Нора Родд комиссияның бөтә члендәре исеменән Корея халҡының юлбашсыһы Ким Ир Сенгә ҡотлау белдерҙе. Комиссия члендәре түбәндәгене белдереүҙе һоранылар:

«Премьер-министр әфәнде, беҙ Кореяның граждандар халҡына ҡарата һәм бигерәк тә катын-ҡыҙҙарға һәм балаларға ҡарата америкаҡан һәм лисынмансы ғәскәрҙәр тарафынан яһалған йыртҡыслыҡтарҙы тикшереү буйынса комиссия булып торабыҙ. Беҙ, төрлө илдән төрлө дини ҡараштарҙы, төрлө политик партияларҙы һәм общественың төрлө ҡатламаларын тәшкил итеүсе 20 делегат һәм бер күҙәтсе, үҙебеҙҙең бөтә көсөбөҙҙә тыныслыҡ эшенә биреүҙең дөйөм теләге менән берләштек. Беҙ тикшереү үткәреү өсөн беҙгә бөтә мөмкинлектәрҙең бирелеүе өсөн һеҙҙең хөкүмәтегеҙгә рәхмәт белдерәбеҙ. Беҙгә бөтә нәмәне күрергә, беҙҙе ҡыҙыҡһындырған фактарға ҡарата теләһә ниндәй кешегә һорау бирергә рөхсәт ителде. Һәр бер ҡалала, һәр бер ауылда халыҡ беҙҙең менән иркен осраша алды, һәм йәрәхәтләнгән кешеләр беҙгә үҙҙәренең ғазаптары тураһында һөйләнеләр.

Беҙ бомбаға һәм утҡа тотоу менән барлыҡҡа килгән ҡотоскос емерелеүҙәрҙе күрҙек. Беҙ бомбалар менән емерелгән һәм яндырылған ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы күрҙек. Беҙ үҙ илдәрен юғары өсөн көрәшеүсе батыр ирҙәрҙе һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы күрҙек. Беҙ, тыныслыҡ уларҙың берҙән-бер ынтылышы булып тороуын беләбеҙ.

Беҙ ҡайҙа ғына булһаҡ та, беҙҙе бөтә урындарҙа ла яҡшы ҡабул иттеләр һәм үҙҙәре йәшәгәнгә ҡарағанда беҙгә күп тапҡырҙарға яҡшыраҡ шарттар тыуҙырҙылар. Беҙ һеҙҙең бөйөк халҡығыҙ тарафынан күрһәтелгән йылы ҡабул итеү өсөн һеҙгә рәхмәт әйтәбеҙ һәм беҙ йыйнаған бөтә мәғлүмәттәр катын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһына тулыһынса тапшырыласаҡтар һәм беҙ был документтар күсермәләренең Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына ебәрелеүен тәҡдим итәсәкбеҙ, тип вәғәҙә итәбеҙ.

Беҙ Берләшкән Милләттәр Ойошмаһынан Корелағы һуғышты туҡтатыу, был һуғыш өсөн яуаплы булған ... шеләрҙе халыҡ-ара трибунал судына биреүҙе һәм яһалған енәйәттәргә ... ға яза биреүҙе талап итәбеҙ. Беҙ ... азат ителмәйенсә һәм донъя һуғ... ҡотолмайынса тороп, тыныслыҡ ... көрәшебеҙҙе туҡтатмаясаҡбыҙ».

Корея Халыҡ-Демократик республикаһы министрҙар кабинетының председателе Ким Ир Сен былай тип белдерҙе:

«Хөрмәтле әфәнделәр! Мин шуға ... — беҙҙең тыуған илебеҙҙе үҙ колонияларына әүерелдерергә ынтылыусы ... империалистәре тарафынан беҙҙең беҙҙә яһалған йыртҡыслыҡтарҙы тикшереү маҡсаты менән һәм һуғыштың характерен асыҡлау өсөн ... реяға килеүегеҙ өсөн һеҙгә тәрән ... белдерәм.

Корелағы ысын хәл тураһында ... рея халҡының ғәзел көрәше тура... бөтә донъяның общественность ... белдерһәгеҙ, мин һеҙгә ҙур рәхмәт ... сәкмен, мин, һеҙҙең ярҙамығыҙ ... еребеҙҙән баҫҡынсыларҙы ҡыуып ... рырға булышлыҡ итәсәк, тип ...

Корея иркле һәм бойондороҡһоҙ ... ласаҡ, Корея бер ваҡытта ла ... империалистәренең колонияһы було... һәм булырға тейеш түгел.

Һеҙгә тыуған илегеҙгә иҫән-һау ... тып етеүегеҙҙе һәм эшегеҙҙә ... теләйем».

Ирандың эске эштәренә Англия-Американың тығылыуы тураһында Иран матбуғаты

ТЕГЕРАН, 3 июнь. (ТАСС). Ирандың премьер-министре Мосаддыҡҡа президент Трумэндең хатына аңлатмалар биреп, «Толу» газетаһы, Тегерандың парламент һәм политик кругтарында был хат Ирандың эске эштәренә Америка тығылыуының яңы төрө итеп баһалана, тип билдәләй.

«Бесуе аянде» газетаһы, Трумэн Мосаддыҡҡа яҙған хатында «Американың империализмының ерәнгес йөҙөнән масканы алып ташланы һәм инглиз талаусылары менән үҙенең хеҙмәттәшлеген официаль раҫланы», тип яҙа. «Трумэндең хаты, — тип яҙа унан ары газета, — Америка империалистәре оятһыҙлығының иң яҡшы миҫалы булып тора. Был хатта Трумэн шулай уҡ ялған хәбәрҙәрҙе лә һәм шантажды ла ҡулланған. Мосаддыҡ сенатта яһаған үҙенең сығышында Трумэндең, йәғни элекке Англия-Иран нефть компанияһы делегаттарының вәкил була алыуҙары менән Иран хөкүмәте ризалашҡайны, тигән раҫлауының ялған булыуын күрһәткән».

Трумэндең хаты Ирандың эске эштәренә тығылыуҙың яңы акты булып тора, тип күрһәтеп «Бесуе аянде» газетаһы унан ары, был тығылыу «Ирандың милли суверенитете принциптәренә һәм БМО Уставына бөтөнләйгә ҡапма-ҡаршы килә», тип билдәләй. «Иран милләте, — тип яҙа газета, — өлгөрөп еткән милләт ул. Ул күрһәтмәләргә, шулай уҡ Трумэндең һәм уның сотрудниктәренең опекаһына мохтаж түгел. Иран милләте Англия-Иран нефть компанияһын бөтөрөргә һәм Англия агенттарын һәм шпиондарын Ирандан ҡыуып сығарырға тамам ҡарар итте. Был ҡарар үтәлергә тейеш һәм доктор Мосаддыҡ үҙ бурысын үтәүҙән ситләшһә, ул Иран халҡының ҡаты һәм киҫкен ҡаршылығына осраясаҡ».

«Бесуе аянде» газетаһы, Трумэн Иран халҡын ҡурҡыта алмаясаҡ, тип яҙа. Трумэн белеп торһон, Иран халҡы Мор... дың «парашютистәренән һәм десантәренән» ҡурҡмаған кеүек үк, Трумэн ялған хәбәрҙәренән дә ҡурҡмаясаҡ.

Газета унан ары былай тип яҙа: ... халҡы «шартлатыуға» ишара итергә... «азат донъяның» (билдәле булыу... конбайын государстволарҙың ... деятелдәре телендә хөкүмәттәре Уолл-стритҡа ... теҙгененда барған илдәр шулай тип ... лалар — ред.) асыуынан да ҡурҡ... саҡ. Беҙ империализмды бөтөрөргә ... лыусы һәм үҙенең бойондороҡһоҙ... суверенитете өсөн көрәшеүсе бөтә ... ләттәргә «азат донъяның» асыу т... яҡшы беләбеҙ. Империализм уларҙа... төрлө ҡарталар ҡул. Ләкин беҙ ... донъя» асыуының халыҡтарҙың ... лыҡ, азатлыҡ һәм милли бойондоро... лоҡ өсөн көрәшеп бер ваҡытта ла ... ға алмаясағын беләбеҙ һәм уны ... бәбеҙҙә күрәбеҙ».

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 4 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 4 июндә, Корея Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, дошман контратакаларын уңышлы кире ҡағалар һәм уға йәнле көскә һәм техникала ҙур юғалтыуҙар яһайҙар, тип хәбәр итте.

Германия демократик республикаһында халыҡтан һорау алыуҙың барышы

БЕРЛИН, 4 июнь. (ТАСС). 3 июндә, Германия демократик республикаһында халыҡтан һорау алыуҙың беренсе көнөндә, 17.00 сәғәткә тиклем 1279 общиналағы тауыш биреү хоҡуҡы булған бөтә кешеләрҙең 100 проценте тауыш бирҙе. 3 июндә Мекленбург ерендә халыҡтан һорау алыуҙа халыҡ айырыуса күп ҡатнашты.

Германия демократик республикаһында халыҡтан һорау алыуҙы үткәреү буйынса етәкселәрҙә булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 3 июндә 17 сәғәткә тиклем Висмар ҡалаһында тауыш бирергә хоҡуҡы булған бөтә кешеләрҙең 88,4 проценте, Цвиккауҙа — 85,1 проценте, Дессауҙа — 83,6 проценте, Бранденбургта — 83,2 проценте, Герала — 83,0, Хальберштадта — 79,8, Ростокта — 77,1, ...тә — 77,0, Потсдамда — 73,0 ...дә — 68,8 проценте тауыш бирҙе.

Берлиндең демократик секторында ... июндең 17 сәғәтенә булған мәғлүмәткә ҡарағанда, төрлө райондарҙа ... 60—99 проценте тауыш бирген.

Гватемала Американың Кореялағы агрессияһын яҡлауҙан баш тарта

НЬЮ-ЙОРК, 3 июнь. (ТАСС). Америка империалистәренең Кореялағы агрессияһында ҡатнашыу өсөн «БМО ҡарамағына» ғәскәрҙәр биреүҙе талап итеп, Латин Америкаһы илдәренә АҠШ-тың баҫым яһауы айҡанлы, Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәресенең Гватемаланан *хәбәр итеүенә* ҡарағанда, Гватемала хөкүмәте Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына, «Гватемаланың сикләнгән ресурстары хөкүмәткә Берләшкән Милләттәр өсөн ниндәй ҙә *ғәскәри көстәр бүлергә мөмкинлек* бирмәйҙәр», тип официаль рәүештә хәбәр итте.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

БАЛАЛАРҘЫҢ УТ МЕНӘН ШАЯРЫУЫНАН ЯНҒЫНДЫҢ БУЛЫУЫНА ЮЛ ҠУЙМАҒЫҘ!

Янғын барлыҡҡа килеүҙә балаларҙың ут менән шаярыуы ҙур сәбәп булып тора.

Йыш ҡына янғындар ҡараусыһыҙ ҡалдырылған балаларҙың ут менән шаярыуынан барлыҡҡа килә. Ҡайһы бер ваҡытта бындай янғындар балаларҙың һәләк булыуы менән тамамлана.

Балалар уйнаған ваҡытта ололарҙың эшләгән нәмәне эшләргә яраталар: шырпы табып, костер яндыралар, самауыр тарталар, примустар, кәрәсинкәләр тоҡандыралар. Һөҙөмтәлә янғын сығыуҙа сәбәпсе булып ҡалалар. Йыш ҡына балалар мейестәр яғылған, примустар, кәрәсинкәләр йәки кәрәсин лампалары тоҡандырылған биналарҙа ҡараусыһыҙ ҡалдырылалар, был шулай уҡ янғындың барлыҡҡа килеүенә килтерә.

Беҙҙең илебеҙҙә балаларҙың ойошҡан һәм культуралы ял итеүҙәре өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған. Балаларҙың ут менән шаярыуҙарына һәм уйнауҙарына юл ҡуймаҫ өсөн бөтә сараларҙы күрергә кәрәк. Быйның менән күңелһеҙ ваҡиғаларҙың булыу мөмкинлеге иҫкәртеләсәк.

Шырпыларҙы, ... жигалкаларҙы, ... мәкене, попро... тарҙы балалар ... алмаған урындарҙа ... ҡуйырға кәрәк. Мейес янған, примус, кәрәсинкә, кәрәсин лампаһы тоҡандырылған биналарҙа балаларҙы бер үҙҙәрен генә бер ваҡытта ҡалдырырға ярамай.

Балаларға ут менән уйнауҙы ҡырҡа тыйырға кәрәк. Балаларҙың тамаша тартмауҙарын, шырпы менән уйнамауҙарын, ҡоролмалар янында костерҙар яндырмауҙарын күҙәтергә кәрәк.

Янғын ҡурҡыныс барлыҡҡа килтереүсе мөмкин булған бөтә нәмәне юҡ итеүҙә уҡыусы балалар янғын охранаһына ярҙам итергә тейештәр. Янғын именселеге ҡағиҙәләрен боҙоу тураһында урындағы янғын охранаһына хәбәр итергә кәрәк.

Ата-әсәләр менән бер рәттән, уҡытыусылар, комсомол һәм пионер ойошмалары балалар араһында аңлатыу эштәрен алып барырға тейештәр. Беседалар ваҡытында һәм йыйылыштарҙа уҡыусыларға балаларҙың ут менән шаярыуҙарына юл ҡуймаҫҡа кәрәклекте аңлатырға, бындай шаярыуҙарҙың ауыр эҙемтәләргә килтереүен күрһәтергә кәрәк.

Башҡорт АССР-ы Эске эштәр Министерствоһының янғын охранаһы управлениеһе.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П 02509 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 111(8828)
1951 йыл
8
ИЮНЬ
йома

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ 1951 ЙЫЛДЫҢ 5 ҺӘМ 6 ИЮНЕНДӘГЕ УЛТЫРЫШТАРЫ ТУРАҺЫНДА ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮҘӘР (1-се бит).
БАШҠОРТ АССР-Ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ УЛТЫРЫШТАРЫ. Башҡорт АССР-ының 1951 йылға бюджеты һәм Башҡорт АССР-ының 1950 йылғы бюджеты үтәлеше тураһында доклад буйынса фекер алышыуҙар (2-се бит).
С. Ваһапов. Башҡортостан нефтселәре үҙ йөкләмәләрен үтәйҙәр (2-се бит).
БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЫНДА. 1951 йылда республика колхоздарында һәм совхоздарында бесән йыйыу һәм мал аҙыҡтары силослауҙы үткәреү тураһында (3-сө бит).
СОВЕТ ФӘНЕ — КОММУНИЗМДЕҢ БӨЙӨК ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ. В. Шаумян.— Донъя буйынса белмәгән темптар (3-сө бит).
СССР Сит ил Эштәре Министерствоһында (3-сө бит).
Е. Тулбаев. — Малсылыҡ фермаларын механизациялаштырыуға ныҡлы иғтибар (4-се бит).
КИНО. З. Ишмаев. — «Тыныслыҡ бөтә донъяла еңер» (4-се бит).
ДҮРТ ДЕРЖАВА СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРҘАРЫ УРЫНБАСАРҘАРЫНЫҢ ӘҘЕРЛЕК КЕҢӘШМӘҺЕ (4-се бит).
Корейлағы ваҡиғалар (4-се бит).

Республикабыҙҙың экономикаһы һәм культураһы артабан сәскә атһын өсөн

Өсөнсө көн генә әле Башҡорт АССР-ы Верховный Советының сессияһы тамамланды. Сессия республикабыҙҙың бюджетын тикшереү һәм башҡа байтаҡ халыҡ хужалығы әһәмиәтендәге мәсьәләләрҙе хәл итте.

Совет Башҡортостаны, Советтар Союзының башҡа республикалары һәм өлкәләре кеүек үк, бик эре аҙымдар менән илебеҙҙә коммунизм еңеүенә табан бара. Башҡортостан хеҙмәтсәндәре коммунистар партияһы етәкселегендә, бөйөк рус халҡының туғандарса ярҙамында, Советтар Союзы халыҡтарының дуҫ һәм берҙәм семьяһында коммунизм төҙөү эшендә актив ҡатнаша.

Башҡорт АССР-ы промышленносының бөтә продукцияһының дөйөм күләме, 1940 йылғыға сағыштырғанда, дүрт тапҡырға тиң әйтерлек артты. Халыҡ хужалығының барлыҡ тармаҡтары ла, бигерәк тә торлаҡ һәм көн-күреш, шулай уҡ культура төҙөлеше бик йылдам темптар менән үҫә бара. Валовой продукция етештереү буйынса 1950 йылға билдәләнгән план республикабыҙҙа 103 процентҡа үтәлде һәм 1949 йылғыға ҡарағанда, продукция етештереү 23 процентҡа артыҡ булды.

Республикабыҙҙың ауыл хужалығы ла бик ныҡ алға китте. Ҡеүәтле тракторҙар һәм комбайндар менән эшләү колхозсы крәҫтиәндәрҙең көндәлек тормошона инде. Үткән йылда колхоздар һәм совхоздар сәсеү планын арттырып үтәнеләр һәм мул урожай үҫтереп алдылар. Һөҙөмтәлә республикабыҙ государствоға игенде тапшырыу планын срогынан алда һәм арттырып үтәүгә өлгәште.

Общественный малсылыҡты үҫтереү буйынса ла республикабыҙ ҙур эш башҡарҙы. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында колхоздар мөгөҙлө эре малдар һанын ике тапҡырға тиерлек арттырҙылар. Һарыҡ һәм кәзәләр һаны ике тапҡырҙан да арттырылды, сусҡалар һаны биш тапҡырға һәм ҡоштар алты тапҡырға тиң әйтерлек арттырылды.

Башҡортостандың бюджеты ла йылдан-йыл үҫә бара. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында республикабыҙҙың бюджеты икеләтә тиң әйтерлек үҫте. 1945 йылда Башҡорт АССР-ының бюджет күләме 480 миллион һум тәшкил иткән булһа, ул 1950 йылда 946 миллион һумға барып етте.

Республикабыҙҙа промышленностең, ауыл хужалығының, фән һәм культураның үҫеүе өсөн коммунистар партияһы, Совет хөкүмәте һәм бөйөк Сталин үҙе көндәлек хәстәрлек күрә һәм даими ярҙам итә. Яңы заводтар, фабрикалар, нефть промыслалары үҫеп сыҡтылар һәм йыһазландырылған ҡалалар барлыҡҡа килтерелде, тәҙек юлдар булдырылды. Формаһы яғынан милли һәм йөкмәткеһе яғынан социалистик культура сәскә атты, әҙәбиәт һәм искусство кадрҙары үҫеп сыҡты. Иптәш Сталиндең атайҙарса ярҙамы менән быйыл беҙҙең республикала СССР Фәндәр Академияһының филиалы ойошторолдо.

Халыҡтың үҫә барған материаль һәм культура көн-күреш талаптарын ҡәнәғәтләндереү өсөн бөтә саралар күрелә. Яңы торлаҡтар, мәктәптәр, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары төҙөлә. Предприятиеларҙа һәм ауыл хужалығында продукцияны күберәк етештереү өсөн киреш көндәлек эш булып әүерелде. Совет кешеләре хеҙмәт етештереүсәнлеген юғары күтәреү, продукцияның сифатын яҡшыртыу һәм үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерҙеләр. Уңыштар күп һәм бик ҙур.

Ләкин совет кешеләре өлгәшелгәндәр менән һис ваҡытта ла тынысланып ҡалмай, ә көндән-көн алға бара һәм коммунизм төҙөй.

Шуға күрә бюджет тә туҡтауһыҙ үҫә. Совет государствоһының бюджеты — ул тыныс төҙөлеш бюджеты, халыҡ интересын ҡәнәғәтләндереүсе бюджет булып тора. Ә капиталистик илдәрҙең бюджеты бер төркөм байҙарҙың интересына хеҙмәт итә, халыҡты эксплуатациялауға, яңы һуғышты әҙерләүгә йүнәлдерелгән.

Советтар Союзы бюджеты расходтарының өстән ике өлөшө халыҡ хужалығын һәм культураһын үҫтереүгә йүнәлдерелгән. Оборона өсөн тотолған расходтар йылдан-йыл кәмей бара. СССР бюджетының расходтарынан илде обороналау өсөн 1940 йылда 32,6 процент тотолған булһа, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың беренсе йылында 23,9 процент кенә тотолдо һәм 1950 йылда илде обороналау өсөн булған расходтар халыҡ хужалығына һәм культура сараларына тотолған бөтә расходтарҙың ни бары 18,5 процентын ғына тәшкил итте. Был һандар Совет государствоһының тыныслыҡ яҡлы һәм тыныс төҙөлеш иле икәнен демонстрациялай торған гүзәл факттар.

Капиталистик илдәрҙең бюджетының күпселек һәм яңы һуғыш тоҡандырыуға, ҡоралланыуға тотола. Америка Ҡушма Штаттарында һәм башҡа капиталистик илдәрҙә хәрби расходтар йылдан-йыл үҫә. Мәҫәлән, АҠШ-та бюджеттың бөтә расходтарынан хәрби расходтар 1939—1940 йылда 22,5 процент тәшкил иткән булһа, ул 1950—1951 йылда 76 процентҡа тиклем барып етте. Башҡа капиталистик илдәрҙә лә шундай уҡ хәл — хәрби расходтар арта бара.

Тик Советтар Союзында ғына бюджеттең абсолют күпселеге халыҡтың материаль һәм культура көн-күрешен яҡшыртыуға йүнәлдерелгән. Коммунистар партияһының ленинсе-сталинсе милли политикаһы тантана итә. Милли республикалар һәм өлкәләр хәҙер илдең экономик яҡтан ҡеүәтле, культуралы райондарына әүерелделәр. Быны Башҡортостан миҫалында бик яҡшы күреп була. 1951 йылға Башҡорт АССР-ы бюджетының дөйөм күләме доходтар һәм расходтар буйынса 966 миллион 669 мең һум тәшкил итә. Бөтә сығанаҡтар иҫәбенә республиканың халыҡ хужалығын финансировать итеүгә үткән йылғы 117 миллион һум урынына 130 миллион һум билдәләнде. Халыҡ хужалығын финансировать итеүгә бюджеттан ассигнованиелар — промышленносҡа 35,5 миллион һум, ауыл хужалығына 26,6 миллион һум һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа — 15,6 миллион һум күләмендә билдәләнде.

Республика бюджеты менән бер рәттән ҡалаларҙа һәм райондарҙа хужалыҡ һәм культура төҙөлешен тормошҡа ашырыуҙа хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтарының бюджеттары бик мөһим роль уйнай. Хәҙерге ваҡытта урындағы Советтарҙың бер мең 367 үҙ аллы бюджеты иҫәпләнә һәм райондар, ҡалалар бюджетының күләме 1951 йылға 712 миллион һум суммала билдәләнде. Был республиканың бөтә бюджетының 74 процентын тәшкил итә.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһының ҡарарҙарын ысын күңелдән хуплай һәм үҙҙәренең Ленин—Сталин партияһы эшенә, бөтә донъяла тыныслыҡ эшенә ысын күңелдән бирелгәнлектәрен белдерәләр. Халыҡ хужалығында яңы производство еңеүҙәре өсөн социалистик ярыш йәйелдерҙеләр. Газеталарҙа байтаҡ райондар колхозсыларының социалистик йөкләмәләре һәм Өфө промышленность-транспорт предприятиелары стахановсыларының һәм новаторҙарының мөрәжәғәте иғлан ителде. Улар үҙҙәренең эштәрендә хеҙмәт етештереүсәнлеген юғары күтәреүҙе, продукцияның сифатын яҡшыртыуҙы һәм уның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙе төп бурыс итеп алалар, колхоз баҫыуҙарының урожай биреүсәнлеген һәм малсылыҡтың артабан үҫеүен тәьмин итергә вәғәҙә бирәләр.

Республикабыҙ бюджеты — Советтар Союзы бюджеты кеүек үк, халыҡ бәхете, шатлыҡлы тормош өсөн хеҙмәт итә, халҡыбыҙҙың материаль һәм культура көн-күрешен артабан яҡшыртыуға йүнәлдерелгән. Хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтары һәм партия ойошмалары бюджеттең теүәл үтәлешен тәьмин итергә бурыслылар һәм хужалыҡтың һәр бер тармағында государство пландарының яҡшы сифатлы үтәлеүенә өлгәшергә тейештәр.

Дағстан АССР-ы нефть промышленносе работниктәренең иптәш Сталинға хаты

Дағстан АССР-ы нефть промышленносының эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре совет халҡының бөйөк юлбашсыһы һәм учителе иптәш Сталинға хат менән мөрәжәғәт иттеләр.

Беҙ, нефтселәр тураһында атайҙарса даими хәстәрлек күргән өсөн, Дағстан нефть промышленносының материаль-техник базаһын нығытыуға һәм артабан сәскә атыуына ипләтелгән көндәлек ярҙамығыҙ өсөн һеҙгә, хәҙерге Иосиф Виссарионович, ихлаҫ-сикһеҙ рәхмәт белдерәбеҙ, тип яҙалар нефтселәр.

Большевиктар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең хәстәрлегенә яуап итеп, Дағстан нефтселәре 1951 йылды нефть сығарыуҙы байтаҡ күтәреү менән билдәләүҙе үҙ бурыстары итеп ҡуялар.

Башҡортостан нефтселәренең саҡырыуы буйынса социалистик ярышҡа ҡушылып, Дағстан нефтселәре «Дагморнефть» тресы буйынса — нефть сығарыуҙың йыллыҡ планын срогынан алда үтәргә һәм пландан тыш 10 мең тонна нефть бирергә, бораулау планын срогынан алда үтәргә һәм пландан тыш 5 мең метр проходка бирергә; өс яңы ятҡылыҡты промышленность разведкаһына индерергә йөкләмә алалар. «Дагтаз» тресы буйынса — газ сығарыуҙың йыллыҡ планын 1 декабргә үтәргә, бораулауҙың йыллыҡ планын срогынан алда, 5 декабргә үтәргә, бер нефть ятҡылығын промышленность эшкәртеүенә тапшырырға, бораулауҙың бер метрының үҙенә төшөү хаҡын, планға ҡарағанда, 2,5 процентҡа кәметергә йөкләмә алалар.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ултырыштары

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының 1951 йыл 5 июндәге ултырышы тураһында

ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ

5 июндә, киске сәғәт 7-лә Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының Ҙур залында Башҡорт АССР-ы Верховный Советының икенсе ултырышы булып үтте.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Председателе депутат **И. F. Ҡадиров** председателлек итте.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаттарының полномочиеларын тикшереү тураһында Мандат комиссияһының председателе депутат **С. Ш. Бикбовтың** докладын тыңланы.

Депутат С. Ш Бикбов Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаттарының 210 һайлау округы буйынса полномочиеларын тикшереү һөҙөмтәләре тураһында Мандат комиссияһының докладын иғлан итә:

«Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Верховный Советына һайлауҙар буйынса һәр бер депутатҡа айырым рәүештә Үҙәк һайлау комиссияһы тарафынан бирелгән документтарҙы тикшергәндән һуң, Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Мандат комиссияһы түбәндәгеләрҙе билдәләй:

1. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советына депутаттар һайлау Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Конституцияһы һәм Верховный Советҡа һайлауҙар тураһындағы Положение нигеҙендә һәм уларға тулыһынса ярашлы рәүештә үткәрелгән.

2. Ниндәй ҙә булһа һайлау округы буйынса һайлауҙарҙы юҡҡа сығарыу өсөн бер ниндәй ҙә нигеҙлектәр, шулай уҡ Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Верховный Советына депутаттар һайлау буйынса Конституцияны һәм һайлауҙар тураһындағы Положениены боҙоуҙар тураһында һайлау округтары буйынса ла, шулай уҡ һайлау комиссиялары буйынса ла жалобалар һәм ғаризалар юҡ.

Юғарыла күрһәтелгәндәр нигеҙендә Верховный Советтың Мандат комиссияһы Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының өсөнсө саҡырылыш Верховный Советының Үҙәк һайлау комиссияһы тарафынан теркәлгән бөтә депутаттарының полномочиеларын дөрөҫ тип таба, депутаттарҙың исемлеге «Красная Башкирия» газетаһының 1951 йыл 24 февралдәге 38-се номерында иғлан ителгән».

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы, Стәрлетамаҡ һәм Ишембай ҡалалары һәм Стәрлетамаҡ районы депутаттары төркөмөнән сығыш яһаусы депутат **Ш. З. Миңйәровтың** тәҡдиме буйынса, Мандат комиссияһының докладе буйынса Башҡорт АССР-ы Верховный Советының ҡарарын ҡабул итә.

«Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы ҡарар итә:

1. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Верховный Советы Мандат комиссияһының докладын раҫларға.

2. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы өсөнсө саҡырылыш Верховный Советының бөтә һайлау округтары буйынса һайланған һәм Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советына һайлауҙар буйынса Үҙәк һайлау комиссияһы тарафынан теркәлгән депутаттарҙың полномочиеларын дөрөҫ, тип табырға.

3. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советына һайлауҙар буйынса Үҙәк һайлау комиссияһының эшен тамамланған, тип иҫәпләргә».

Унан һуң Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Бюджет комиссияһының Председателе **М. А. Динмөхәмәтовтың** докладын тыңланы (рус телендә). Өҫтәмә докладты башҡорт телендә уҡыу өсөн Бюджет комиссияһының члены депутат **Г. Ш. Вахитоваға** һүҙ бирелә.

Бюджет комиссияһының өҫтәмә докладын уҡығандан һуң 1951 йылға Башҡорт АССР-ының бюджеты һәм 1950 йылда бюджеттең үтәлеше тураһындағы доклад буйынса фекер алышыуҙар башланды. Фекер алышыуҙарҙа депутат **Н. И. Капустин** (Горький округы), депутат **Г. П. Данилко** (Көньяҡ округы, Стәрлетамаҡ ҡалаһы), депутат **Т. Б. Терегулов** (Шахта округы), депутат **Г. И. Бердин** (Сайран округы), депутат **П. Е. Попков** (Дзержинский округы, Черниковск ҡалаһы), Башҡорт АССР-ы социаль тәьминәт министры **F. F. Исәнбаков**, хеҙмәтсәндәр депутаттарының Хәйбулла район Советы исполкомы председателе **Л. Г. Таһиров**, депутат **Н. И. Иванов** (Бажанова округы) сығыш яһанылар.

Шуның менән Башҡорт АССР-ы Верховный Советының икенсе ултырышы ябыла.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының 1951 йыл 6 июндәге иртәнге ултырышы тураһында

ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ

6 июндә, көндөҙгө 11 сәғәттә Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының Ҙур залында Башҡорт АССР-ы Верховный Советының өсөнсө ултырышы булып үтте.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Председателе депутат **И. F. Ҡадиров** председателлек итә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының ултырышында Башҡорт АССР-ының 1951 йылға бюджеты һәм 1950 йылда Башҡорт АССР-ы бюджетының үтәлеше тураһындағы доклад буйынса фекер алышыуҙар дауам итте.

Фекер алышыуҙарҙа депутат **С. Х. Ғимаев** (Нарыш һайлау округы), депутат **М. Н. Сиразетдинова** (Охлебинин округы), депутат **Т. Е. Наймушина** (Ҡыйғы һайлау округы), Башҡорт АССР-ы урындағы промышленность министры иптәш **П. В. Сливнев**, депутат **К. А. Ососкова** (Краснояр округы), Государство банкыһының Башҡортостан контораһы управляющийы иптәш **А. Н. Курмаев**, РСФСР Верховный Советы депутаты иптәш **С. И. Кувыкин**, депутат **И. Х. Ишмөхәмәтов** (Фрунзе һайлау округы), депутат **З. Б. Григорьева** (Совет округы, Белорет ҡалаһы), депутат **Р. А. Заниров** (Нефть промыслаһы округы, Октябрьский ҡалаһы), депутат **П. Е. Васильев** (Ҡушйылға округы), Башҡорт АССР-ының Мәғариф министры **С. Р. Әлибаев**, депутат **М. Г. Хәсәнов** (Мостафа һайлау округы), депутат **М. Т. Баһаутдинова** (Дүртөйлө округы), Башҡорт АССР-ының Коммуналь хужалыҡ министры иптәш **И. В. Крюков**, депутат **З. М. Янбухтина** (Кушнаренко округы), депутат **Х. Ш. Сәитов** (Салауат округы, Ишембай ҡалаһы), депутат **Н. Р. Уразбаев** (Яңғыҙ ҡайын округы) сығыш яһанылар.

Башҡорт АССР-ының Верховный Советы депутат **П. И. Каменевтең** (Архангель округы) старейшиналар Советы исеменән индергән тәҡдиме буйынса Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателе депутат Н. Р. Уразбаевҡа хөкүмәттең — Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Министрҙар Советының составы тураһында Башҡорт АССР-ы Верховный Советына тәҡдим индереүҙе тапшырырға ҡарар итә. Депутат Каменев түбәндәге ҡарар проектын тәҡдим итә:

«Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы Министрҙар Советына ышаныс белдерә һәм Министрҙар Советы Председателе депутат Насыр Рәфиҡ улы Уразбаевҡа хөкүмәттең — Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Министрҙар Советының составы тураһында Верховный Советҡа тәҡдим индереүҙе тапшыра».

Был тәҡдим бер тауыштан ҡабул ителә.

Шуның менән Башҡорт АССР-ы Верховный Советының өсөнсө ултырышы ябыла.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының 1951 йыл 6 июндәге киске ултырышы тураһында

ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ

6 июндә, киске 7 сәғәттә Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының Ҙур залында Башҡорт АССР-ы Верховный Советының дүртенсе ултырышы булып үтте.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Председателе депутат **И. F. Ҡадиров** председателлек итә.

Ултырыш башында БАССР Финанс министры иптәш **С. Ф. Вәлиев** йомғаҡлау һүҙе менән сығыш яһаны.

Депутат **М. А. Динмөхәмәтовтың** тәҡдиме буйынса Башҡорт АССР-ы Верховный Советы бюджетты раҫлауҙың түбәндәге тәртибен ҡабул итә: Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының бюджетын доход һәм расход бүлектәре буйынса тауышҡа ҡуйырға, республика бюджетын доход һәм расходтар буйынса дөйөм суммаларҙа тауышҡа ҡуйырға, Башҡорт АССР-ының 1951 йылға бюджеты тураһындағы Законды статьялар буйынса тауышҡа ҡуйырға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы 1951 йылға Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының бюджетын һәм 1950 йылда Башҡорт АССР-ы бюджетының үтәлеше тураһындағы отчетты бер тауыштан раҫлай. 1951 йылға Башҡорт АССР-ының бюджеты тураһындағы Закон статьялар буйынса, ә унан һуң тотошлай бер тауыштан раҫлана.

Башҡорт АССР-ының Верховный Советы көн тәртибендәге 4-се мәсьәләне — Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Указдарын раҫлауҙы тикшереүгә күсә. Был мәсьәлә буйынса доклад менән депутат **И. Ә. Йәркәев** сығыш яһаны.

Башҡорт АССР-ының Верховный Советы «Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәр депутаттарының ауыл һәм посёлка Советтарына һайлауҙар буйынса һайлау нормалары тураһында» Верховный Совет Президиумының 1951 йыл 4 октябрҙәге Указын бер тауыштан раҫлай һәм Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 108-се статьяһына тейешле үҙгәртеүҙәр индерә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының 1950 йылдың 10 декабрендә сығарған «Башҡорт АССР-ы Верховный Советына һайлауҙарҙа вәкиллек нормалары тураһында»ғы Указын бер тауыштан раҫлай һәм Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 22-се статьяһына тейешле үҙгәртеүҙәрҙе индерә.

Башҡорт АССР-ының Верховный Советы шулай уҡ Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының «Башҡорт АССР-ының Урман промышленносе министерствоһын бөтөрөү тураһында» 1951 йыл 4 апрелдәге Указын раҫлай һәм Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 44-се статьяһына тейешле үҙгәрештәр индерә. Унан һуң Верховный Совет, Башҡорт АССР-ы Верховный Судының председателен һәм айырым члендарын эштәренән бушатыу айҡанлы, Верховный Суд председателен, айырым члендарын һәм халыҡ заседателдәрен һайлай.

Унан ары Башҡорт АССР-ының Верховный Советы көн тәртибенең нәүбәттәге мәсьәләһенә — Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Президиумын һайлауға күсә.

Депутат **Х. Л. Ҡорбанғолов** Верховный Советтың тикшереүенә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының составы тураһында тәҡдим индерә. Верховный Совет бер тауыштан Президиум Председателе, Председателенең ике урынбаҫары, Президиумдың секретаре, 11 член составында Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Президиумы һайлай.

Депутат **Н. Р. Уразбаев**, Башҡорт АССР-ы Верховный Советының тапшырыуына ярашлы рәүештә, Верховный Совет ҡарамағына Башҡорт АССР-ы хөкүмәтенең — Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының составы тураһында тәҡдим индерә.

Верховный Совет Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Министрҙар Советы составын бер тауыштан раҫлай.

Верховный Совет сессияһының көн тәртибендәге мәсьәләләр ҡаралып бөттө. Верховный Совет Председателе депутат **И. F. Ҡадиров** Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһын ябыҡ тип иғлан итә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаттарынан бер төркөм.

Һүрәттә (һулдан уңға): М. Т. Баһаутдинова—Дүртөйлө районы Карл Маркс исемендәге колхоздың күк һарыҡ бригадаһы бригадиры, М. С. Колотыгин —Туймазы районы Түбән Троицк буҫтау фабрикаһының смена мастеры, Ф. Л. Максютова — Дүртөйлө районы Ворошилов исемендәге колхоз председателе, В. Ф. Жилин — Баймаҡ районы Сибай рудниге мастеры, П. Е. Васильев — Советтар Союзы Геройы, Бишбүләк район Советы исполкомы председателе.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Колхозсылар ярышы

Стәрлебаш. (Телефон аша). Колхозсылар юғары урожай үҫтереп алыу өсөн социалистик ярышҡа сыҡтылар. Был патриотик хәрәкәткә районда Һәйҙәлдерен еҫәреүҙә Сталин исемендәге ауыл хужалығы артеленең члендары инициатор булдылар. Улар 1350 гектар бойҙайҙың һәр бер гектарынан 120-шәр бот, арыштан 110-ар бот, көнбағыштан 65-әр бот һәм картофтан 200-әр центнер урожай алырға һүҙ бирҙеләр.

Хәҙер йөкләмәләрҙе үтәү өсөн баҫыуҙарҙа ҡыҙыу эш ҡайнай. Һәр кем күберәк һәм сифатлыраҡ эшләргә тырыша. Колхозсыларҙың үҙ-ара ярышын ойошторолоу һөҙөмтәһендә бөртөклө ашлыҡ культураларын утау сифатлы итеп тамамланды. Көнбағыш сәсеүлектәрен һирәкләтеү һәм рәт араларын йомшартыу эштәре үткәрелә.

Колхозда ауыл хужалығы машиналарын ремонтлау тамамланыу алдында.

З. Анчурин,

ВКП(б) райкомының ауыл хужалығы бүлеге мөдире.

Башкорт АССР-ы Верховный Советенең ултырыштары

Башкорт АССР-ының 1951 йылға бюджете һәм Башкорт АССР-ының 1950 йылғы бюджете үтәлеше тураһында доклад буйынса фекер алышыуҙар

5 июндәге кискә һәм 6 июндәге иртәнге ултырышта «Башкорт АССР-ының 1951 йылға бюджете һәм Башкорт АССР-ының 1950 йылғы бюджете үтәлеше тураһында» Башкорт АССР-ы Финанс Министры С. Ф. Вәлиевтең докладлы буйынса фекер алышыуҙар булды.

5 июнә фекер алышыуҙарҙа беренсе булып депутат Н. И. Капустин (Өфө калаһының Горький округы) сығыш яһаны.

— Башкорт АССР-ының государство бюджеты, — тине ул, — республикабыҙ хужалык һәм культура тормошоноң бөтә тармактарының үсешен сағылдыра. Бюджет хеҙмәтсәндәрҙең материаль-тормош кимәлен артабан күтәреүгә йүнәлтелгән.

Депутат Капустин Башкортостандың башкалаһы Өфөнө төҙекләндереү тураһында һөйләй. Ағымдағы йылда яңы мәктәптәр, мунсалар, библиотека һәм кинотеатрҙы төҙөү тамамланырға тейеш. Трамвай юлдары байтак киңәйтелә. Кала ситендәге урамдарҙы электрлаштырыу һәм радиолаштырыу буйынса ҙур эштәр эшләнә. Ләкин был эшкә ассигнованиелар үҙләштерелмәгәндәр әле, төҙөлеш эштәренә техник документация эшләнмәгән. Республикабыҙҙың башка калалары тураһында хәстәрлек күреү менән генә сикләнмәйенсә, Коммуналь хужалык министерствоһы Башкортостандың башкалаһын материаль-техник тәьмин итеүҙе ойоштороуҙа Өфөгә лә ҙур иғтибар бирергә тейеш. Төҙекләндереү эштәренә халыкты бөтә саралар менән йәлеп итергә кәрәк.

Депутат Н. И. Капустин 1951 йылға бюджеттең проектын хупларға һәм уны раҫларға тәкдим итә.

Депутат Г. П. Даниленко (Стәрлетамак калаһының Каньяк округы) былай тине:

— Башкортостан калаларының йөҙө беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа үҙгәрә. Миҫал өсөн Стәрлетамак калаһын алайык. Ул хәҙер республиканың иң ҙур калаларынан береһенә әйләнде. Һуғыштан һуңғы осорҙа уның халкы ике тапкырға тиң әйтерлек артты.

Промышленность һәм халыктың үсеүе менән бер рәттән торлак фонды ла үсә. Быйыл хеҙмәтсәндәр 28 мең квадрат метрҙан артығырак яңы торлак майҙаны аласактар. Ағымдағы йылда дүрт урта мәктәп, больницалар һәм башка объекттар төҙөү билдәләнә.

Кала предприятиеларының коллективтары сталинса төҙөлештәргә ярҙам күрһәтәләр. Мәҫәлән, төҙөү машиналары заводы коллективы Куйбышев һәм Сталинград ГЭС-тары өсөн дизелдәр һәм һауа сүкештәре етештерә.

Каланы төҙекләндереү саралары тураһында һөйләп, депутат Даниленко коммуналь хужалыктың халык һанының күбәйеүенән артта калыуын билдәләй. Төҙөлөш эштәре тик кала ситтәрендә генә бара, ә каланың эсендә бер нәмә лә тип әйтерлек эшләнмәй. Юлдар насар, водопровод төҙөк түгел һәм башкалар.

— Башкорт АССР-ының Коммуналь хужалык министерствоһы беҙҙең каланың ихтыяждарына иғтибарҙы аҙ бүлә. Водопроводтың беренсе нәүбәтен төҙөү эше 1948 йылда уҡ башланған булһа ла, уның һаман да төҙөлөп бөткәне юк әле.

— Әлшәй районының колхозсылары, МТС һәм совхоз работниктәре, — тине үҙенең сығышында депутат Т. Б. Терегулов (Шахта округы), — ауыл хужалығының бөтә тармактарын күтәреү өсөн ныкышмалы эшләйҙәр. Үҙган йылда районда мул урожай үстерелде. Колхоздар һәм совхоздар игеп эҙерләү, государствоға картоф һәм йәшелсә тапшырыу планын срогынан алда үтәнеләр. Быйыл районның колхоздары бөртөклө һәм башка культуралар сәсеүҙе юғары агротехник кимәлдә тамамланылар. Ағымдағы йылда юғары урожай өсөн социалистик ярыш яңы көс менән йәйелдерелде.

Районның колхоздарында, МТС һәм совхоздарында ауыл хужалығын артабан үҫтереүгә тоткарлык яһаусы ҙур етешһеҙлектәр бар. Мәҫәлән, районның МТС-тары бөтә трактор эштәре буйынса государство планын үтәмәнеләр, колхоздар менән төҙөлгән договор шарттарындағы сроктарҙы боҙҙолар.

Районда Сталин һәм Ленин исемендәге һәм башка ҙур колхоздар бар. Был ауыл хужалығы артелдәренең члендәре үҙҙәренең дөйөм йыйылыштарында электростанциялар төҙөй башларға карар иттеләр һәм уға средство бүлеү мәсьәләһен каранылар. Колхоздарҙың етәкселәре Башкорт АССР-ының Башсельэлектроһына һәм Ауыл хужалығы министерствоһына кәрәкле оборудованиены алыу һәм проектлау эшен башлау тураһында ярҙам һорап мөрәжәғәт иттеләр. Ләкин реаль ярҙам ала алманылар.

Депутат П. Е. Попков (Дзержинский округы) үҙенең сығышында йәш кала — Черниковскиҙың бюджеты үҫеүе тураһында һөйләне. Тик бер мәғариф эшенә генә ассигнованиелар, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 2 тапкырға үҫте.

Каланы төҙекләндереүҙәге етешһеҙлектәр тураһында һөйләп, депутат Попков автобус паркын машиналар менән тулыландырыу кәрәклеген билдәләй.

Башкорт АССР-ы социаль тәьминәт министры F. F. Исәнбәков үҙенең сығышында, Башкорт АССР-ының 1951 йылға бюджетында социаль-культура сараларына каралған байтак суммалар хеҙмәтсәндәрҙең материаль-тормошон яҡшыртыу тураһында партия һәм хөкүмәттең хәстәрлеген сағылдыра, тип билдәләй. Тик үҙган йылда ғына социаль тәьминәт өсөн расходтар республика буйынса 285,9 миллион һум тәшкил итте, уның 7,9 миллион һумы республика бюджетенән.

Инвалидтарҙы, оло йәштәге граждандарҙың йорттарын тотоуға, вакытлы ярҙам күрһәтеүгә, пенсионерҙарға ярҙамға, санитар-культура һәм дауалау өсөн ҙур средстволар тотонолдо.

Укытыусыларға, медицина һәм башка работниктәргә оҙак йылдар эшләгән өсөн юғарылатылған күләмдә пенсиялар түләнә. Былар бөтәһе лә беҙҙең илебеҙҙә бюджеттең тыныс мәҡсәттәрҙә, хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күрешен яҡшыртыуға йүнәлдерелгәнлеген күрһәтәләр.

Иптәш Исәнбәков кайһы бер район социаль тәьминәт бүлектәренең пенсионерҙарға һәм оло йәштәге граждандарға ярҙам күрһәтеүгә общественносте ойоштороу урынына, бюджет буйынса ассигновать ителгән средстволарҙы бүлеп бирeү менән генә сикләнеүҙәрен билдәләй.

Иптәш Исәнбәков, күп кенә колхоздарҙың етәкселәре һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советы исполкомдары, шулай уҡ район социаль тәьминәт бүлектәре инвалидтарҙың торлактарын ремонтлау тураһында уларҙың һорауҙарына ғәмһеҙ карайҙар, кайһы бер район финанс бүлектәре беҙҙең тарафтан үткәрелгән сараларҙы үҙ вакытында финансировать итмәйҙәр, тип билдәләй. Аскын, Байкыбаш, Воскресен райондарында һәм Белорет калаһында беренсе кварталда пенсионерҙарға вакытлы ярҙам күрһәтеү өсөн средство бөтөнләй ебәрелмәгән. Финанс органдары социаль тәьминәт сараларын аныҡ финансировать итергә бурыслылар.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Хәйбулла район Советы исполкомы председателе иптәш Л. Г. Таһиров үҙенең сығышында Хәйбулла район үҙәге — Акъяр ауылын төҙекләндереү буйынса ҙур эштәр үткәрергә кәрәклеге тураһында туҡталды. Ул Башкорт АССР-ы Сауҙа министерствоһының тәнкитләне. Министерствоның работниктәре райондарҙа бөтөнләй булмайҙар тип әйтерлек һәм халыктың ихтыяждарын белмәйҙәр.

Депутат Н. И. Иванов (Баженова округы) Вера районы хеҙмәтсәндәренең бөртөклө культуралардан юғары урожай алыу өсөн көрәшеүҙәре тураһында һөйләй. Күпселек колхоздар, үҙган йылға карағанда, сәсеүҙе ойошканырак үткәрҙеләр. Мәҫәлән, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Рябов етәкселек иткән трактор бригадаһы хеҙмәтләндергән Ильич исемендәге колхоз сәсеүҙе 4 көн эсендә, Чапаев исемендәге колхоз — 6 көн эсендә тамамланы.

Депутат Иванов районда урожайлылыкты күтәреү буйынса колхозсылар тарафынан алынған йөкләмәләр тураһында һөйләне.

— Бирелә, — тип дауам итә ул, — күп кенә укыу йорттары бар, унда юғары һәм урта квалификациялы работниктәр кадрҙары әҙерләнә. Күп кенә предприятиелар һәм ойошмалар бар. Уларҙың эшендә ҙур кыйынлыктар була. Эш шунда тора, йәшәп килгән гидроэлектростанцияларҙың көҫәте ҙур түгел һәм каланың электр энергияһына булған талаптарын канәғәтләндерә алмайҙар. Күп кенә укыу йорттары занятиеларҙы ике сменала үткәрәләр. Икмәк комбинаты, типография, коммуналь предприятиелар ҙа шулай уҡ ике сменала эшләйҙәр.

Электростанцияларҙың көҫәтен арттырыу тураһындағы мәсьәлә — көндәң үҙәгендә торған мәсьәлә һәм уны һис кисектерергә ярамай. Был мәсьәлә менән беҙ Башкорт АССР-ының Министрҙар Советына һәм Коммуналь хужалык министерствоһына бер нисә тапкыр мөрәжәғәт иттек. Ләкин мәсьәлә әле вакытка тиклем хәл ителмәй калды.

Депутат С. Х. Ғимаев (Парыш һайлау округы) үҙенең сығышында түбәндәгеләр тураһында һөйләне:

— Туймазы еренең тарихы ҙур: унда беҙҙең атайҙарыбыҙ һәм бабайҙарыбыҙ — ярлы игенселәр йәшәгән. Совет власы осоронда крайҙың йөҙө тамырынан үҙгәрҙе. Бөйөк Советтәр иленда коммунизм төҙөлөштәре башланған йылдарҙа, беҙҙең далала нефть сыға башланы. Совет индустрияһы беҙҙең тормошобоҙҙо, көн-күрешебеҙҙе танымаслык үҙгәртте. Мулланы ауылы халкының 75 проценты нефть промышленносена килделәр, бораулаусылар һәм вышкалар төҙөүселәр, шоферҙар һәм операторҙар булдылар. Крәҫтиән улы Ғәтиәтуллин — холодо-сварка цехының начальнигы, Хәсәнетдинов иптәш Солдатов етәкселек иткән алдынғы бригадала бораулаусы ярҙамсыһы булып, крәҫтиән кыҙы Вәлиуллина — алдынғы оператор булып эшләй.

Нефтселәр калаһында биш йыл эсендә 120 мең квадрат метр торлак майҙаны төҙөлөп, эксплуатацияға тапшырылды. 1947 йылда беҙҙең бораулау бригадаларыбыҙ станок-айға 300 метр бораулау өсөн көрәшһәләр, 1948 — 1949 йылдарҙа инде беҙ 500 метр өсөн, ә ағымдағы йылда 1000 метр өсөн көрәш алып барабыҙ. Башкорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһына мин яңы рапорт менән килдем: мин бораулаусы булып эшләгән Купреянов иптәш бригадаһы 31 майҙа яңы буровойҙы тамамлап, станок-айға 1002 метр бирҙе. Беҙҙең нефтселәребеҙ бер-ике йылдан 1200 һәм 1500 метр скважина проходкаһы бирәсәктәр!

Фекер алышыуҙарҙа шулай уҡ депутат М. Н. Сиражетдинова (Охлебинен округы), депутат Т. Е. Наймушина (Кыйгы округы), Башкорт АССР-ының урындағы промышленность министры иптәш П. В. Сливнов, депутат Н. А. Ососкова (Краснояр округы), депутат Г. И. Бердин (Сайран округы), Государство банкыһының Башкортостан конторaһы управляющийы иптәш А. Н. Курмаев, РСФСР Верховный Советы депутаты С. И. Кувыкин, депутат И. Х. Ишмехәмәтов (Фрунзе округы), депутат З. Б. Григорьев (Совет округы, Белорет калаһы), депутат Р. А. Заниров (Нефть промыслаһы округы, Октябрьский калаһы), депутат П. Е. Васильев (Күш-йылға округы), Башкорт АССР-ының мәғариф министры иптәш С. Р. Әлибаев, депутат М. Г. Хәсәнов (Мостафа округы), депутат М. Т. Баһаутдинова (Дүртөйлө округы), Башкорт АССР-ының коммуналь хужалык министры иптәш И. В. Крюков, депутат З. М. Янбухтина (Кушнаренко округы), депутат Х. Ш. Сәитов (Салауат округы, Ишембай калаһы), депутат Н. Р. Уразбаев (Яңғыҙ һайын округы) сығыш яһаны.

Башкорт АССР-ы Верховный Советы депутаттарынан бер төркөм.

Һүрәттә (һулдан уңға): Г. Т. Ғилмашина — Борай районы Молотов исемендәге колхоздың сусҡа ҡараусыһы, F. М. Иҫәнбулатов — ВКП(б)-ның Стәрлебаш район комитеты секретары, Х. К. Камалов — Благовар район Советы исполкомы председателе, М. Ф. Карпинский — ВКП(б)-ның Мияҡы район комитеты секретары, Г. Г. Рафиков — Кырмыҫкалы район Советы исполкомы председателе, М. А. Абдулмакова — Архангель районы Маленков исемендәге колхоздың колхозсыһы.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

БАШКОРТОСТАН НЕФТСЕЛӘРЕ ҮҘ ЙӨКЛӘМӘЛӘРЕН ҮТӘРҘӘР

С. ВАҺАПОВ,
ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә Комитеты секретары

Һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыктың бөйөк йомғактары менән рухланған Башкортостан нефтселәре үткән йылдар өлгөһөндә 1951 йыл планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш ойоштороорға карар иттеләр. Улар иптәш Сталинға яҙған хатта быйыл нефть сығарыуҙы, үткән йылға сағыштырғанда, 22,4 процентка арттырырға һәм пландан тыш 100 мең тонна нефть бирергә, нефть скважиналарын бораулау планын срогынан алда үтәргә, нефть эшкәртеү заданиеһен арттырып үтәргә, төҙөлөш-монтаж эштәрен тиҙләтергә йөкләмә алдылар.

Ленин — Сталин партияһының ихтыяры буйынса төҙөлгән Башкортостан нефть промышленносы һуғыштан һуңғы осорҙа ҙур уңыштарға өлгәште. 1950 йылда республикала нефть сығарыу 1946 йылға сағыштырғанда ике ярым тапкырға үҫте. Торлак һәм культура көн-күреш төҙөлөше буйынса ҙур эштәр башкарылды.

Иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәштә Башкортостан нефтселәрен солғап алған ғәйәт ҙур политик һәм производство күтәренкелегенең аңлатып биреүе кыйын. Ярыш барышында йөҙәрләгән яңы стахановсылар, производство новаторҙары күтәрелә. Эшселәрҙең айырым төркөмдәре генә түгел, бәлки промыслаларҙың, бораулау конторaларының, төҙөлөш управлениеларының тотош коллективтары стахановсы эш методтарына күсәләр.

Эшселәрҙең, инженерҙарҙың һәм техниктарҙың ижади активлеге, промыслаларҙың һәм предприятиеларҙың үҫә барған техник кораллаңышы — быларҙың бөтәһе лә республика нефтселәренә 1951 йыл планын срогынан алда үтәү өсөн ярышта алған йөкләмәләрен уңышлы тормошка ашырыуға мөмкинлек бирә. Ағымдағы йылдың үткән айҙарындағы эш йомғактары нефтселәрҙең һүҙҙәре эштән айырылмауын күрһәтә. Нефть сығарыуҙың һәм эшкәртеүҙең дүрт айлык планы тулыһынса һәм арттырып үтәлде.

Күп йылдар буйына нефть скважиналарын бораулауҙың артта калып килеүе нигеҙҙә бөтөрөлдө. Үткән дүрт ай эсендә бораулау эштәренең фактик үтәлгән күләме, үткән йылдың шул уҡ осоронa сағыштырғанда, өстән бер өлөштән артығыракка үҫте. Шул уҡ осорҙа разведка бораулауы ике тапкыр самаһы артты. Бораулау тиҙлеге, айырыуса «Туймазынефть» тресы буровойҙарында байтак күтәрелде.

Бораулау бригадалары торған һайын күберәк һанда тиҙләтелгән режимда эшләүгә күсәләр. Электробур ярҙамында бораулауҙың яңы ысулын промышленноста үҙләштереү дауам итә. Бораулаусылар өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе ныгытыу ғына түгел, бәлки уны яҡшыртырға, үҙҙәрендә булған резервтарҙы файҙаланыу эшен тағы ла кыйыуырак йәйелдерергә бурыслылар. Якындағы вакыт эсендә разведка бораулауының артта калыуын бөтөрөргә кәрәк.

Ҙур төҙөлөш ойошмалары программаны уңышлы үтәп киләләр. Хәҙер төҙөүселәрҙең иғтибары һәм көстәре яңы эре көҫәттәрҙе эксплуатацияға индереүгә йүнәлдерелгән. Торлак төҙөлөшө бик күп алға китте.

Партия ойошмалары нефтселәрҙең социалистик ярышының башында торалар. Улар социалистик ярышка етәкселекте яҡшыртыу сараларын күрәләр. Партия ойошмалары ярышыусыларҙың көсен, бөтәһенән дә элек, бай техниканы яҡшырак файҙаланыуға, предприятиеларҙың ритмлы эшләүҙәренә өлгәшеүгә, хеҙмәт етештереүсәнлеген һәм техник-экономик күрһәткестәрҙе күтәреүгә, продукцияның сифатын яҡшыртыуға һәм үҙенә төшөү хакын кәметеүгә йүнәлтәләр.

Партия ойошмалары промыслаларҙа, заводтарҙа һәм төҙөлөштәрҙә партия-политик эштең кимәлен күтәреүгә, хужалык органдарының производство эшмәкәрлегенә контроль хоҡуҡын яҡшырак ғәмәлгә ашырыуға ынтылалар. Промыслаларҙа һәм төҙөлөш участкаларында, ярҙамсы предприятиеларҙың цехтарында, эҙләнеү-разведкалау коллективтарында ойошторолған һәм йөҙәрләгән партия группалары төҙөлгән һәм улар эшләп киләләр. Был группаларҙың башында иң яҡшы производственниктар-коммунистар тора, улар бик күп патриотик башланғыстарҙың инициаторҙары һәм ойоштороусылары булып сығыш яһайҙар. Мәҫәлән, «Туймазынефть» тресы беренсе промыслаһы икенсе участкаһының операторы Антонина Демина биш скважинаны хеҙмәтләндереү инициаторы булып сығыш яһаны, участканың бөтә коллективы стахановсы эш алымдарын кулланыуға дәртләндерҙе. Иптәш Демина өлгөһөндә башка күп операторҙар бер нисә скважинаны хеҙмәтләндереүгә күстеләр. Ишембайҙа нефть сығарыу буйынса иң яҡшы мастер партгруппорг иптәш Копылов инициативаһы буйынса түбәнге производство берәмектәре хужалык иҫәбенә күсерелде.

Промыслаларҙа, бораулау конторaларында, заводтарҙа һәм төҙөлөштәрҙә агитколлективтар нығытылды. Партияның Октябрьский һәм Ишембай кала комитеттары һәм Өфө нефть эшкәртеү заводының парткомы нефтселәр араһында эшләүсе агитаторҙарға даими рәүештә практик ярҙам күрһәтәләр. Партия ойошмалары экономика мәсьәләләренә, кадрҙарҙың экономик белемдәрен күтәреүгә күберәк иғтибар бирә башланылар. Был мәҡсәт менән махсус семинарҙар һәм консультациялар үткәрелә.

Партия ойошмалары ярҙамында нефтселәр производствоны артабан камиллаштыреү буйынса ҙур ойоштороу-техник бурыстарҙы хәл итәләр. Мәҫәлән, Октябрьский нефтселәре нефть пластарына һыу ебәреү проблемаһын — был нефть сығарыуҙы арттырыуҙың донъяла иң яҡшы совет ысулын уңышлы хәл иттеләр. Эшселәр, инженер-техник работниктар пластарға һыу ебәреүҙең катмарлы техникаһын үҙләштереп кенә калманылар, бәлки уны артабан камиллаштыреү эшенә баһалап бөтөргөһөҙ ижади вклад индерҙеләр. Хәҙер пластарға һыу ебәреү ҙур масштабтарҙа кулланыла һәм гүзәл һөҙөмтәләр бирә.

Нефть эшкәртеүсе работниктар, нефть промышленносенең фәнни учреждениелары менән берҙәләп, яңы технология процестарын индереү һәм үҙләштереү буйынса күп эш башкаралар. Был якын киләсәктә тонок нефть продукттарын айырып алыуҙы тамырынан яҡшыртасак, уларҙың сифатын күтәрәсәк һәм продукцияның үҙенә төшөү хакын байтак кәметеүгә килтерәсәк.

«Туймазынефть» тресының партия, профсоюз ойошмалары һәм хужалык етәкселәре атаклы бораулау мастерҙары Куприянов, Усов һәм башка иптәштәрҙең тәжрибәләрен өйрәнеү һәм дөйөмләштереү буйынса ҙур эш башкарҙылар. Скважиналарҙы бораулау режимы һәм күтәреү-төшөрөү операцияларының тәжрибәһе айырыуса ентекләп өйрәнелде. Был тиҙләтелгән һәм көҙәттәге режимда бораулауҙың яңы технологик карталарын эшләргә мөмкинлек бирҙе.

Бораулау мастеры коммунист иптәш Сидоренко бригадаһы бораулауҙың яңы режимын урынлаштырҙы. Был бригада скважинаны Көнсығыш өсөн рекордлы тиҙлек менән — станок-айға 1156 метр тиҙлек менән бораулады, сәғәтенә 6 метр механик тиҙлеккә өлгәште. Алдынғы мастерҙар методы буйынса эшләп, шулай уҡ Белялдинов, Аллаяров иптәштәрҙең һәм башка бик күптәрҙең бригадалары ла юғары тиҙлеккә өлгәштеләр. Партия һәм хужалык ойошмалары бөтә бораулау бригадаларын да яңы эш режимына күсереү һәм шуның менән бораулау темпын кырка күтәреү сараларын күрәләр.

Ишембайҙа һәм Октябрьскийҙа тәжрибәле бораулау мастерҙары һәм ғилми работниктар етәкселегендә конструкторҙар бригадалары төҙөлдө. Был бригадаларҙа эшләп, нефтселәр нефть сығарыуҙың һәм бораулауҙың алдынғы методтарын өйрәнәләр. Партия һәм хужалык ойошмалары атаклы Баку новаторы иптәш Кафаровтың эш методын ныкышмалы рәүештә башкаларға күсерәләр. Алдынғы методтарҙы киң таратыу яҡшы һөҙөмтәләр бирә.

Бөтә промыслаларҙа, заводтарҙа һәм ярҙамсы предприятиеларҙа, төҙөлөш ойошмаларында эшселәр оборудованиены һәм материаль кимммәттәрҙе социалистик һаклыкка алалар. Улар үҙҙәренең йөкләмәләрен оборудованиеларҙы эшләтеү срокын оҙайтыу, материалдарҙы, сырье, инструменттарҙы экономиялау менән нығыталар. «Башнефть» берекмәһенең промыслаларында скважиналарҙың ремонт-ара эшләү осоро 150 көндән артык тәшкил итә, ә айырым промыслаларҙа 200 — 300 көнгә тиклем етә. Ремонтһыҙ бер йыл һәм унан да артык эшләгән скважиналар бар.

Партия ойошмалары кадрҙарҙың иғтибарын цех һәм бригадаларҙа хужалык иҫәбен артабан камиллаштыреүгә йүнәлтәләр. Хужалык иҫәбен индереү һәм нығытыу хужалык эшмәкәрлегенең бөтә звеноларында рентабеллелекте артабан күтәреүгә, продукцияның үҙенә төшөү хакын кәметеүгә яңынан-яңы мөмкинлектәр табырға ярҙам итә. Ағымдағы йылдың дүрт айында «Башнефть» берекмәһенең предприятиеларында һәм промыслаларында продукцияның үҙенә төшөү хакын кәметеү планы уңышлы үтәлде. Был йәһәттән «Ишембайнефть» тресы айырыуса яҡшы күрһәткестәр бирҙе, унда [illegible] нефть сығарыу һәм бораулау бригадалары, ярҙамсы предприятиеларҙың бөтә [illegible] тары хужалык иҫәбенә күсерелде.

Промыслаларҙың, бораулау конторaларының хужалык эшмәкәрлеген [illegible] тыуҙа нефть сығарыу участкаларын [illegible] ләтеү һәм бораулауҙы тиҙләтеү иҫәбе [illegible] бораулау бригадаларының һаны [illegible] ҙур роль уйнаны. Ләкин эште артабан яҡшыртыуҙың һәм хужалык иҫәбен [illegible] дереүҙең мөһим шарты булған производство звеноларын эрелтеүҙе бөтә предприятиеларҙа һәм промыслаларҙа үткәрергә өлгәшергә кәрәк.

Партия ойошмаларының бөтәһе лә социалистик ярышка берҙәй үк оҫта [illegible] дерәс етәкселек итәләр, тип раҫлау [illegible] булыр ине. Айырым предприятиеларҙа ярыш ойоштороуҙа формализм һәм [illegible] рация элементтары бөтөрөлмәгән әле.

Мәҫәлән, «Башвостокнефтеразведка» тресының партия ойошмаһы, айырым стахановсыларҙың һәм бригадаларҙың [illegible] ҙанныштары һәм уңыштары менән мауығып, эшселәрҙең байтак өлөшөн социалистик ярышка ылыктырыуҙы тәьмин итмәй. Трест управляющийы иптәш Ефремов һәм партия ойошмаһының етәксеһе иптәш Алершин асылда ярышка етәкселек итеүҙән ситләшкәндәр, стахановсыларҙың тәжрибәләрен насар өйрәнәләр һәм уны ғәтләнмәслек тараталар, артта калыусыларҙы алдынғылар кимәленә күтәреү тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр. Бораулаусылар, ремонтсылар, геологтар араһында агитация эш социалистик ярыштың конкрет бурыстарынан айырып алып барыла.

Был трестың хужалык работниктәре һәм партия ойошмаһы эштәге етешһеҙлектәргә карата талапсан карамайҙар. Трестың буровойҙарында оборудование һәнәрсәнерлек файҙаланылмай, кәрәкле материалдарҙы ташыу насар ойошторолған. Шуға күрә лә был трест, башка трестар менән бер үк шартта эшләп, биш айлык производство планын иң башы 90 процентка үтәүе көҙәл түгел.

Оборудованиеларҙы файҙаланыу, государство пландарын үтәү эше «Башнефтепромстрой» тресында насар тора. Трест управляющийы иптәш Назаренко мөһим объекттарҙы төҙөү пландарын һәм торлак төҙөлөшө планын үтәүҙе тәьмин итмәй. Ул трестың көстәрен һәм средстволарын күп һанлы, хатта икенсе дәрәжәләге объекттарға таратыуға юл куйҙы. Был зыянлы практика нефть разведкасыларының эшенә һәм нефтселәр өсөн эш фронтын әҙерләүгә камасаулай.

Күптән түгел партия өлкә комитеты партия ойошмаларының эшен тикшерҙе. «Башнефтезаводтар» тресының айырым предприятиеларында ла социалистик ярышка етәкселек итеүҙәге ярамһыҙ практиканы асты. Партия комитеттары коллективтарҙы предприятиелар эшенең технико-экономик күрһәткестәрен яҡшыртыуға һәм яклап мобилизацияларға, цех партия ойошмаларының эшмәкәрлегендәге, айырым цехтарҙың эшендәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрергә тейештәр.

СССР Нефть промышленносы министерствоһының геофизика тресы етәкселегенең эшендәге сереһә етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә кәрәк. Улар үҙ бурыстарын [illegible] лек аңламайҙар, нефть разведкалау трестарҙын эшенә насар һәм аныҡ булмаған ориентировка бирәләр.

Башкортостан нефтселәре социалистик ярышта үҙҙәренең йөкләмәләрен тулыһынса, вакытында һәм юғары сифатлы итеп үтәй алһындар өсөн артта калған участкаларҙың хужалык етәкселәре һәм партия ойошмалары эштәрен большевиктарса кайтанан корорға һәм социалистик ярышка етәкселекте яҡшыртырға тейештәр.

Беҙҙең бөтә промыслаларыбыҙҙың, заводтарыбыҙҙың, бөтә бораулау конторaларыбыҙҙың юғары эш класына күтәрелеп, юғары культуралы предприятиелар булып әүерелеү өсөн мөмкинлектәре бар. Партия ойошмалары бөтә көстә производствоның һәр бер участкаһының планды тулыһынса һәм арттырып үтәүенә көрәшкә мобилизацияларға тейештәр. Бораулауҙы алға ебәреү, проходканың үҙенә төшөү хакын арзанайтыу, бораулау оборудованиеларының тик тороуҙарын бөтөрөү айырыуса мөһим. Торлак, коммуналь төҙөлөшө һәм коммуникацияларҙы төҙөү буйынса ғәйәт ҙур масштабтағы эштәрҙе башкарыу бурысы алда тора.

Социалистик ярыш — партия ойошмаларының һәм бөтә хеҙмәтсәндәрҙең яҡын эше ул. Башкортостан нефтселәре иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү менән бөйөк Тыуған илебеҙҙең көҫәтен нығытыу, коммунизм төҙөү эшенә үҙҙәренең яңы вкладтарын индерерҙәр.

(«Правда» газетаһының 1951 йыл 5 июнь номеренән).

„Кыҙыл Башкортостан" материалдары буйынса

„ГАЗЕТАЛАР БИК ҺУҢЛАП ТАПШЫРЫЛА"

Ошондай исем менән «Кыҙыл Башкортостан» газетаһының 95-се номерында Кәйәргәҙе районы Күмертау посёлкаһындағы связь бүлексәһенең насар эшләүе һәм подписчиктарҙың газеталарҙы тулыһынса ала алмауҙары тураһында хәбәр баҫылғайны.

Ошо айкала ВКП(б)-ның Кәйәргәҙе район комитеты редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Күмертау посёлкаһы связь бүлексәһендә подписчиктарға газеталарҙы һуңлап тапшырыу тураһындағы хәбәр тикшерелеп, унда күрһәтелгән фактар бик урынлы тип табылды. Үҙ эшенә яуаплы карағаны өсөн связь бүлексәһе начальнигы Сидоренко эшенән бушатылды. Шул уҡ вакытта күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм эште артабан яҡшыртыу өсөн конкрет саралар билдәләнде».

Башкорт АССР-ы Министрҙар Советендә

1951 йылда республика колхоздарында һәм совхоздарында бесән йыйнау һәм мал аҙыктары силослауҙы үткәреү тураһында

Башкорт АССР-ы Министрҙар Советы, күп кенә колхоздарҙа мал аҙығы базаһының канәғәтләнмәслек торошо колхоздарҙың һәм совхоздарҙың общественный малсылығын артабан үстереүгә тоткарлык булып калыуы дауам итә әле, тип билдәләне.

Архангель, Аскын, Бакалы, Балабай, Белокатай, Бәрә һәм башка күп кенә районларҙың колхоздарында мал аҙығы культураларын сәсеү планы йылдан-йыл үтәлмәй кала, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яксыртыу буйынса эш бик насар алып барыла, бесән сабыу һәм мал аҙыктарын силослау буйынса эште һуңға калыуға юл куйыла, һөҙөмтәлә бесәнлектәрҙең байтак майҙаны йыл һайын йыйылмай кала.

1950 йылда Калининск, Борай һәм башка машина-трактор станциялары бесән сабыуҙы ла, мал аҙыктарын силослауҙы ла үтәмәнеләр. Күп кенә МТС-тарҙың, ЛЗС-тарҙың директорҙары бесән сабыуҙы һәм мал аҙыктарын силослауҙы механизациялауҙың әһәмиәтен баһалап етермәүҙе дауам итәләр, ә бесәнде йыйнау, кәбәндәргә һалыу, силос корылмаларын әҙерләү һәм мал аҙығы өсөн йәшел массаны ташыу машина-трактор станциялары һәм махсуслаштырылган станциялар техникаһынан бөтөнләй үткәрелмәй.

Республиканың күп кенә районларының совет һәм ауыл хужалыгы органдарының етәкселәре һутлы мал аҙыктары туплауға тейешле иғтибар бирмәйҙәр. 1950 йылда күпселек колхоздарҙа һәм совхоздарҙа силос корылмалары үҙ вакытында әҙерләнмәнеләр, силос һалыныуы һуңгарак башланды, [illegible] ваклыкта һалынды, был силос сифатын түбәнәйтергә һәм уны юғалтыуға килтерҙе. Күп кенә районда совет һәм ауыл хужалыгы органдары мал аҙыктары культураларын сәсеүҙе, болондарҙы яксыртыуҙы, тамыр аҙыклылар сәсеүҙе, мал аҙыктарын силослауҙы һәм бесән сабыу һәм йыйнау эштәрен тейешенсә тикшереүҙе һәм уларҙың сифатына күҙәтеүҙе ойошторорға тырышмайҙар.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың общественный малсылығын бесән һәм һутлы аҙыктар менән тулыһынса тәьмин итеү маҡсатында Башкорт АССР-ы Министрҙар Советы Ауыл хужалыгы министрствоһына, Совхоздар трестарына, район Советтәре исполкомдарына, район ауыл хужалыгы бүлектәренә, МТС һәм совхоз директорҙарына түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итте:

күп йыллык һәм бер йыллык үләндәр, тамыр аҙыклылар һәм силос культураларын сәсеү планын һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итергә, сәсеүлектәрҙе тейешенсә тәрбиәләүҙе ойошторорға, мал аҙыктары культураларынан юғары уңыш алыу тураһында колхоздарҙың һәм совхоздарҙың планын тулыһынса һәм артығы менән үтәүгә өлгәшергә;

колхоздарҙа, совхоздарҙа һәм МТС-тарҙа бесән йыйнау машиналарын һәм силос турағыстарҙы ремонтлауҙы тиҙерәк тамамлау, шулай ук Башсельхозснаб һәм Совхозснаб складтарында булган машиналарҙы урындарға оҙатыуҙы тиҙерәк тамамлау өсөн саралар күрергә;

бесән йыйнауҙы, шулай ук бесәнде кәбәндәргә һалыуҙы бөртөклө культураларҙы йыйыу башланғанға тиклем тулыһынса тамамлау өсөн бесән сабыу, мал аҙыктарын силослау буйынса үткәреү буйынса бөтә кәрәкле заданиеларҙы һәр бер колхозға, совхозға һәм МТС-ка еткерергә;

бесән сабыу һәм аҙыктарын силослау буйынса колхоздарҙа эш пландарын төҙөүҙе тәьмин итергә, уларҙа бесән сабыу участкаларын бригадаларға беркетеүҙе күҙҙә тоторға;

мал аҙыктары байлыктарын булмаған колхоздарға һәм совхоздарға бесән сабыу өсөн Госземфондтан, Гослесфондтан, шулай ук урман сабынлыктары булган совхоздар һәм ойошмалар ерҙәренән бесән сабыу участкаларын бүлергә;

бесән йыйнауҙы иң кыҫка вакытларҙа үткәреү һәм юғары сифатлы бесән алыу мақсатларында бесәнлек майҙандарын тапталудан, асыс теләтерәгә һәм ныгытыуға бөтә техникаларҙан һәм һис ниндәй тоткарлыкһыҙ тәүҙә ойошторорға;

болондарҙа һәм үләнле иккенсе тапкыр бесән сабыу өсөн билдәләнгән бөтә участкаларҙа мал көтөүгә тыйырға;

улар йыйылғанға үҙ вакытында башлау тәьмин итергә, бакалы үләндәргә башланғанда еттерә һәм күп уҙып кидерә, ике тапкыр ... сабыу менән бесәнде әҫеретергә һалыуҙы тәьмин итергә ағзалыкка;

бесән йыйнау һәм силос һалыу ... булып колхозсыларҙың һәм колхоз эштән был колхозсыларҙы һәм совхоз эшселәрен һәм тәүлек норма тулыһынса һәм артығы менән үтәүҙе тәьмин итергә;

бесән йыйыуҙа бөтә машиналарҙы ла улар йыйылғанда тейешле тулыһынса файҙаланырға, һәр бер колхоз һәм совхоз бесән һәм ... атлы сабыу өсөн ... итергә; һәр бер колхозда һәм совхозда мал аҙыктарын үҙ вакытында иҫәпкә алыуҙы ойошторорға һәм уны урлауҙан, малдарҙан ашатыуҙан һәм янғындан һаклауҙы тәьмин итергә, шулай ук мал аҙыктарын вакытынан элек ашатыуға юл куймаҫҡа;

малдарҙы һутлы аҙыктар менән тәьмин итеүҙең ҙур әһәмиәтен иҫәпкә алып, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа силос башняларын, соҡорҙарын һәм траншеяларын төҙөүҙе һәм ремонтлауҙы ойошторорға, был эште мал аҙығын силослау планын үтәүҙе тәьмин итеүсе күләмдәрҙә силос һалына башлау вакытына тамамларға;

Башсельхозснаб складтарына килтерелгән силос башняларын һәм ҡрым башняларын колхоздарҙың һис кисекмәстән алыуҙарын тәьмин итергә һәм был корылмаларҙы быйыл файҙаланыу иҫәбе менән уларҙы колхоздарҙа урынлаштырыуҙы ойошторорға;

колхоздарҙа һәм совхоздарҙа мал аҙыктарын силослауҙы иртә сроктарҙа ойошторорға, силослауҙың йыллык планының кәмендә 90 проценте игел йыйнау башланыуға үтәлергә тейеш;

силос культураларының сәсеүлектәрен үҙ вакытында йыйнауҙы тәьмин итергә, уларҙың йыйналмайынса оҙак тороуҙарына юл куймаҫҡа, үҫемлектәрҙе сапкас та, йәшел массаны шунда уҡ һалырға;

кырағай үҫеүсе үләндәрҙе, йәшелсә культураларының калдыктарын һәм тамыр аҙыктарының һабактарын силослау өсөн киң файҙаланырға.

Башкорт АССР-ы Министрҙар Советы Ауыл хужалыгы министрствоһына, совхоздар трестарына, район Советтәре исполкомдарына һәм район ауыл хужалыгы бүлектәренә түбәндәгеләрҙе эшләргә тәкдим итте:

1951 йылда бесән сабыу һәм мал аҙыктарын силослау буйынса пландарҙы һәр бер машина-трактор станцияһына, һәр бер МТС-ка һәм совхозға ... еткерергә, МТС-тарҙа мал аҙыктарын силослау ... бесән сабыу буйынса... һәр бер трактор менән бергәләп эшләүсе ... трактор менән ... 600 гектарға, үҙ йөрөй торған һәр бер бесән сапкысына кәмендә 1000 гектарға еткереү һәм һәр бер трактор силос турағысына силос турауҙы 800—1000 тоннаға еткереү өсөн, трактор агрегаттарын айырыуса тәжрибәле колхозсылар, совхоз эшселәре һәм трактористар менән комплектовать итеүҙе тәьмин итергә;

МТС-тарҙа мал аҙыктарын силослауҙың эш пландарын төҙөүҙе тәьмин итергә, уларҙа силос турау эшенең сроктарын, силос массаһын ташыу өсөн тартыу көсөнөң һәм автотранспорттың кәрәкле һанын бүлеүҙе һәм силос турағыстарҙы хеҙмәтләндереү өсөн кәрәкле һанда кешеләр билдәләүҙе күҙҙә тоторға.

Башкорт АССР-ы Министрҙар Советы бесән йыйнауҙы һәм мал аҙыктарын силослауҙы үткәреү буйынса, һыу баҫа торған һәм түбән ерҙәргә урынлашкан болондарҙа бесән өсөн үләндәрҙе икенсе тапкыр сабыуҙы үткәреү буйынса республика районларының пландар һәм заданиелар һәм кесерткән, япраҡ аҙыктар әҙерләү планын раҫланы һәм район Советтәре исполкомдарын кесерткән һәм япраҡ аҙыктарын әҙерләү планын колхоздарға һис кисекмәстән еткерергә һәм уның үтәлешенә контроль урынлаштырырға мәжбүр итте.

Урман хужалыгы управлениеһына колхоздарҙы япраҡ аҙыктарын әҙерләүгә тоткарлыкһыҙ ебәреү тураһында лесхоздарға һис кисекмәстән күрһәтмә бирергә тәкдим ителде.

МТС, ЛЗС һәм болон-мелиорация станцияларының директорҙарына колхоздарҙа мал аҙыктарын силослау осоронда, колхоздарҙың гужевой транспортын максималь файҙаланыу менән бер рәттән шулай уҡ силос массаһын ташыу өсөн МТС, ЛЗС, ЛМС автотранспортын файҙаланырға тәкдим ителде.

Артык сабынлыктары булган колхоздарға 1951 йылға сабынлыктары етешмәгән колхоздарға артык сабынлык участкаларын бирергә тәкдим ителде, бында сабынлыктар бирелгән колхоздарҙың государствоға тейешле поставкаларҙы үтәүе шарт итеп куйыла. Һәр бер айырым вакиғала сабынлык участкаларын бүлеүҙе колхозсыларҙың дөйөм йыйылышының карарынан һәм район Советы исполкомының раҫлауынан һуң үткәрергә.

Башкорт АССР-ы Министрҙар Советы СССР Әҙерләүҙәр министерствоһының Башкорт АССР-ындағы уполномоченныйынан һәм район Советы исполкомдарынан бесән әҙерләүҙе ойоштороуҙа 1950 йылда булган етешһеҙлектәргә юл куймаҫ өсөн кәрәкле саралар күреүҙе һәм быйыл государствоға бесән тапшырыу планын һәр бер колхоздың һәм районның һис һүҙһеҙ үтәүен тәьмин итеүҙе талап итте.

Район Советтәре исполкомдары колхоздарҙа һәм совхоздарҙа бесән сабыуҙы һәм мал аҙыктарын силослауҙы үткәреү буйынса биш көн вакыт эсендә кәрәкле саралар эшләп сығарырға, был мәсьәлә буйынса үҙ карарҙарын район матбуғатында иғлан итергә, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа бесән йыйнауҙы һәм мал аҙыктарын силослауҙы әҙерләүҙең һәм үткәреүҙең барышы тураһындағы мәсьәләләрҙе һәр биш көн һайын район Советы исполкомында карарға, асылган етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн оператив саралар күрергә бурыслылар.

1951 йыл 7 июнда Иван Владимирович Мичуриндең үлеүенә 16 йыл тулды. Совет иле хеҙмәтсәндәре был тәбиғәтте бөйөк үҙгәртеп короусының тиңһеҙ хеҙмәттәрен юғары баһалайҙар.

Мичуриндең учениеһы беҙҙең илебеҙҙә киң таралган.

Һүрәттә: И. В. Мичурин. (ТАСС фотохроникаһы).

Мичуринсе агробиология нигеҙендә

Бәрә районы Башкортостандың төньяк районларынан береһе. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем беҙ бында емеш-еләк ағастары үҫтереү тураһында оҙак йылдар буйына хыялландык. Ләкин ул вакытта беҙҙә баксасы-агрономдар булмаһылар. Ултыртҡан ағастарыбыҙ короно, түккән көстәребеҙ юғалды.

Совет власе йылдарында Бәрә районының кешеләре генә түгел, баҫыуҙары ла бөтөнләйгә үҙгәрҙе. Унда хәҙер 1500 гектарлап емеш-еләк баксаһы бар. Бында беҙ мичуринсе агробиология фәне менән коралланған махсус специалистар— агрономдар ярҙамында өлгәштек. Улар беҙҙе баксасылык эшенә өйрәттеләр.

Рус халкының күренекле улы, тәбиғәтте үҙгәртеүсе Иван Владимирович Мичурин учениеһенең әһәмиәте беҙгә, колхоз баксасылары өсөн сикһеҙ ҙур.

Иван Владимировичтең эшен беҙ дауам итебеҙ. Мин һуңғы йылдарҙа үҙемдең белемемде арттырыу өҫтөндә эшләү арҡаһында ябай баксасынан баксасы-агроном исеме алыуға өлгәштем.

Берия исемендәге колхозда мин 10 гектар емеш-еләк баксаһы тәрбиәләйем. Унда 3 төрлө курай еләге, 4 төрлө крыжовник, ер еләктәре һәм 23 сортлы алма ағастары үҫтерелә. Улар араһында Шафран китайка, Ранет Бергомотовый, Кандель китайка, Бильфлер китайка кеүек мичуринсе сортлы алмалар бар. Беҙ уларҙы йылдан-йыл климатлаштыра барабыҙ һәм урожайын күтәрәбеҙ. Мәҫәлән, үҙган йыл беҙҙең колхоз баксасылыктан 42 мең һум күләмендә доход алды. Ә быйыл баксасылыктан тағы ла юғарырак урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ.

А. Косыхин,

Бәрә районы Берия исемендәге колхоздың баксасы-агрономы.

—◆—

Алдынғы бригада

Кушнаренко МТС-ының иптәш Сәхәпов етәкселек иткән трактор бригадаһы «Күмәк» колхозын хеҙмәтләндерә. Бригада быйыл яҙ 961 гектар ер һөрҙө. 1015 гектар ашлык сәсте, бик күп яғыулыкка экономия яһаны. Яҙғы сәсеүҙәге алдынғылығы өсөн уға МТС-тың күсмә Кыҙыл Байрағы тапшырылды.

Ф. Имаметдинов.

СССР Сит ил Эштәре Министерствоһында

Ошо йылдың 31 майында Сит ил Эштәре Министрҙәре Урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә АКШ, Англия һәм Франция вәкилдәре Парижда СССР Сит ил Эштәре Министренең Урынбаҫары А. Громыкоға бер үк йөкмәткеле ноталар тапшырҙылар, был ноталарҙа, үҙ-ара кабул ителерлек көн тәртибенә карата әҙерлек кәңәшмәһендә килешеүгә өлгәшелмәне, тип билдәләнелгәйне, һәм өс держава делегациялары тарафынан 2 майҙа тәкдим ителгән көн тәртибенең өс вариантының береһе нигеҙендә 23 июлдә Вашингтонда дүрт державаның Сит ил Эштәре Министрҙәре кәңәшмәһен саҡырырға тәкдим ителгәйне. Юғарыла әйтелгән нота. ларҙың күсермәләрен АКШ, Англия һәм Франция Посольстволары СССР Сит ил Эштәре Министерствоһына шул уҡ көндө ебәрҙеләр.

4 июнда Парижда дүрт держава Сит ил Эштәре Министрҙәре Урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә СССР вәкиле А. Громыко юғарыла әйтелгән кәңәшмәлә АКШ, Англия һәм Франция вәкилдәренә өс державаның 31 майҙағы нотаһына Совет Хөкүмәтенең яуап нотаһын тапшырҙы.

Совет Хөкүмәтенең яуап нотаһының текстында былай тип әйтелә:

«Совет Хөкүмәте, элек иҫәпләгән кеүек хәҙер ҙә, Европала киҫеркенешле хәлде бөтөрөүгә һәм тыныслыкты нығытыуға кағылган айырыуса мөһим мәсьәләләрҙе тикшереү өсөн дүрт державаның Сит ил Эштәре Министрҙәре Советен тиҙерәк саҡырыуҙы кәрәкле һәм файҙалы, тип иҫәпләй.

Ләкин Совет Хөкүмәте, Министрҙар Урынбаҫарҙарының Париждағы кәңәшмәһенең эшен еҙәҡ максатка ярашлы булмаҫ ине һәм уға Сит ил Эштәре Министрҙәре Советенең көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү һәм Атлантик пакт һәм АКШ-тың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне килешелмәгән пункт сифатында көн тәртибенә индереү буйынса үҙ эштәрен дауам иттерергә мөмкинлек бирергә кәрәк булыр ине, тип иҫәпләй.

Совет Хөкүмәте, СССР менән өс держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙең насарайыуының төп сәбәбе булып хеҙмәт иткән Американың хәрби базалары һәм Атлантик пакт тураһындағы мәсьәләне асыктан-асык тикшереү Европала киҫеркенешлек атмосфераһын байтак йомшартыр ине һәм сит ил эштәре министрҙәре Советы кәңәшмәһенең эшен еңеләйтер ине, тип иҫәпләй.

Бына ярашлы рәүештә Совет Хөкүмәте Атлантик пакт һәм АКШ-тың хәрби базаларына карата пунктты көн тәртибенә индереү тураһындағы мәсьәләне сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының Париждағы кәңәшмәһе ыңғай мәнәндә хәл итһә те, сит ил эштәре министрҙәре Советенең Вашингтондағы кәңәшмәһенә үҙ вәкилен кисекмәҫтән ебәрергә әҙер тора».

Совет хөкүмәтенең юғарыла күрһәтелгән нотаһының күсермәләрен СССР Сит ил Эштәре Министерствоһы 4 июнда АКШ, Англия һәм Францияның Мәскәүҙәге посольстволарына ебәрҙе.

(ТАСС).

Государство территориялары участкаларын алмашыу тураһында Совет-Польша Договорының ратификацион грамоталары менән алмашыу

1951 йылдың 5 июнендә Варшавала СССР Союзының Польша Республикаһындағы Ғәҙәттән Тыш һәм Тулы Хокуклы Посолы А. А. Соболев һәм Польша Республикаһының Сит ил Эштәре Министре С. Скшешевский государство территориялары участкаларын алмашыу тураһында Совет Социалистик Республикалар Союзы менән Польша Республикаһы араһындағы Договорҙың ратификацион грамоталары менән алмаштылар. Был Договорға 1951 йылдың 15 февралендә Мәскәүҙә кул куйылгайны һәм ул СССР Верховный Советы Президиумы тарафынан 1951 йылдың 31 майында һәм Польша Республикаһының Закондар сығарыусы Сейменең 1951 йылдың 26 майындағы Карары нигеҙендә Польша Республикаһының Президенте тарафынан 1951 йылдың 28 майында ратификацияланғайны.

Ратификацион грамоталар менән алмашыуҙа:

Совет яғынан — СССР Посольствоһының Советниктәре Д. И. Заикин, И. С. Кузнецов; СССР Посольствоһының беренсе секретаре Я. Б. Подольский;

Польша яғынан — Сит ил эштәренең вице Министре С. Верблевский. Сит ил эштәре министерствоһының Договор-Хокук Бюроһының директоры М. Лакс һәм Сит ил эштәре министерствоһының Департамент директоры вазифаларын үтәүсе Е. Палухова катнашты.

Республика колхоздарында пар һөрөүҙең барышы

(План үтәлеше 1951 йылдың 5 июненә, процентта̧рҙа)

Тоткан урыны	Райондар	Пар һөрөлгән	Тоткан урыны	Райондар	Пар һөрөлгән	Тоткан урыны	Райондар	Пар һөрөлгән
1	Туймазы	100	22	Иглин	64	44	Стәрлебаш	48
2	Өфө	99	23	Байкыбаш	61	45	Салмаруш	48
3	Кандра	86	24	Күгәрсен	61	46	Абзан	47
4	Макар	85	25	Бөҙәлә	60	47	Дыуан	43
5	Дүртөйлө	81	26	Бәләбәй	60	48	Кырмыскалы	42
6	Яңауыл	81	27	Мишкә	60	49	Миәкә	42
7	Дәүләкән	77	28	Әбйәлил	59	50	Воскресен	41
8	Иомағужа	77	29	Аскын	58	51	Салауат	39
9	Оло Теләк	74	30	Кыйғы	58	52	Кушнаренко	39
10	Бәрә	74	31	Балтач	57	53	Карайҙел	38
11	Шаран	72	32	Калтасы	56	54	Бишбүләк	37
12	Краснокама	72	33	Белорет	56	55	Архангель	37
13	Бүҙәк	71	34	Әлшәй	56	56	Матрай	35
14	Баймак	70	35	Ғафури	55	57	Белокатай	34
15	Йәрмәкәй	69	36	Ауырғазы	54	58	Мәләүез	33
16	Тәтешле	78	37	Көйөргәҙе	54	59	Федоровка	32
17	Бакалы	68	38	Благовар	53	60	Мәсетле	30
18	Шишмә	67	39	Хәйбулла	52	61	Учалы	23
19	Нуриман	66	40	Покровка	50	62	Йылайыр	11
20	Стәрлетамак	66	41	Илеш	50	63	Бөрйән	5
21	Благовещен	65	42	Зианчура	49	64	Октябрьский калаһы	58
			43	Борай	48			

Совет фәне—коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренә

I. Донъя быҒаса белмәгән темптар

Яңы гигант гидроэлектростанциялар, каналдар, һыу менән тәьмин итеү һәм һуғарыу системалары төҙөү тураһында иптәш Сталин тарафынан эшләнгән план коммунистик төҙөлештең бөйөк сталинсе планының бик мөһим состав өлөшө булып тора.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен тормошка ашырыуҙа СССР-ҙың бөтә халыктары катнаша. Бөтәһе 5—7 йыл үтер, Волганың, Донның, Днепрҙың һәм Аму-Дарьяның һыуҙары көҙәтле турбиналарҙы хәрәкәткә килтерер, был турбиналар йыл һайын 22 миллиард киловатт-сәғәттән артығырак электроэнергия эшләп сығарыр, 28 миллион гектарҙан артығырак дала, ярым сүл һәм сәсеүлек ерҙәрҙе һуғарыр һәм һыуландырыр. Дымлылыкка түйған баҫыуҙар бойҙай, мамык, дөгө һәм башка киммәтле ауыл хужалыгы культураларынан юғары уңыш алыуға мөмкинлек бирәсәк. Шылдам рәүештә үҫеп барыусы малсылык өсөн яңы, бай аҙык базаһы тыуасак.

Был дүрт йылға араһында балакайерак булғаны — Дон йыл һайын Азов диңгеҙенә ауыл хужалыгы өсөн файҙалы булган 25 миллиард кубометрҙан артығырак һыу илтә. Бында был һыу файҙаһыҙға юкка әйләнә, ә шул ук вакытта был һыу менән 5 миллион гектарҙан артык ерҙе һуғарып булыр ине.

Днепр һәм Аму-Дарья йылғаларының һәр береһенең Дон йылғаһына карағанда ике тапкырҙан артык, ә Волганың ун тапкырҙан артык һыуҙы диңгеҙҙәргә илткәнен иҫкә алһак, был тәбиғи ресурстарҙы файҙаланып, халык хужалығын үҫтереү өсөн ниндәй ҙур энергия һәм һыу запастары алырға була икәнен күҙ алдына килтерергә мөмкин.

Социалистик экономиканың күтәрелеүе, фән һәм техниканың үҫеше, киң хеҙмәтсән массаларҙың культура-техник кимәленең бик нык үҫеүе был катмарлы бурысты бик ҙур гидроэлектростанциялар һәм гигант каналдар короу юлы менән уңышлы хәл итергә мөмкинлек тыуҙырҙы. Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен тормошка ашырыу пландарының нигеҙенә тәбиғәтте үҙгәртеп короу тураһындағы сталинсе учение һалынған, был учение тәбиғәттең көстәрен аңларға, уның байлыктарын коммунистик төҙөлеш интерестары, хеҙмәтсән массаларҙың интерестары өсөн файҙаланырға мөмкинлек бирә.

Коммунизмдең гранноз төҙөлештәренең көҙәте һәм масштабы яғынан, төҙөү темптары, техник бурыстарҙың катмарлылығы яғынан донъяла тиңе юк.

Волгала төҙөләсәк Куйбышев һәм Сталинград гидроэлектростанциялары баҙаһында яғындағы 5-6 йыл эсендә Поволжьелағы һәм Каспий үйһыулығындағы дала һәм ярым дала районларында 14 миллион гектарҙан артык ер һуғарыласак һәм һыу менән тәьмин ителәсәк.

Төп Төркмәнстан каналы Төньяк Төркмәнстандың Каспий диңгеҙе яғындағы тигеҙлегендә булган көньяк районларындағы, Аму-Дарьяның түбән ағымындағы, Кара-Комдың киңбайыш өлөшендәге 8,3 миллион гектар ергә һыу бирәсәк.

Каховка гидроузелын, Көньяк Украина һәм Төньяк Кырым каналдарын төҙөү Украинаның һәм Кырымдың уңыш бирә торған 3,2 миллион гектар ерен культураны игенселеккә кушырға мөмкинлек бирәсәк.

Волга-Дон каналы һәм ҙур һуғарыу селтәре төҙөләү айканлы короолокло районларҙа 2,75 миллион гектар ер үҫемлектәрҙе йөнләндерә торған һыу аласак.

Һуғарыла һәм һыу менән тәьмин ителә торған ерҙәр майҙаны 5—7 йыл эсендә илебеҙҙә нык киңәйәсәк. Ул Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем булғанға карағанда 10 тапкырға артык. Ина йылғаһы тураһында күп меңләгән йыл тарихе булган был тугайҙа бөтә һуғарыла торған ерҙәргә карағанда 11 тапкырға артык, американлылар һуңғы бер йөҙ йыл буйына һуғара һәм һыуландыра алған бөтә майҙанға карағанда дүрт ярым тапкырға артык буласак.

Кыҫка ғына бер вакытта дөйөм көҙәттәре 4,2 миллион киловатт булган гидроэлектростанциялар төҙөләсәк. Кара диңгеҙ, Азов, Каспий, Арал һәм Балтик диңгеҙҙәрен үҙ-ара бәйләүсе һыу юлдарының киң селтәре булдырыласак. Был гидроэлектростанцияларҙың йыл һайын бирәсәк электроэнергияһы Октябрь революцияһына тиклем Россия электростанциялары бирған электроэнергиянан 12 тапкыр артык буласак.

Сталинсе төҙөлештәрҙең масштабтарын һәм темптарын асығырак күҙ алдына килтереү өсөн уларҙы капиталистик илдәрҙә төҙөлгән ҙур каналдарҙың масштабтары һәм темптары менән сағыштырып карайык.

Билдәле, 166 километр оҙонлоғондағы Суэц каналы 10 йылда, 98 километр оҙонлоғондағы Кильский каналы 8 йылда, ә 81 километр оҙонлоғондағы Панама каналы 33 йылда төҙөлгән. Шулай итеп, һәр йылды уртаса: Суэц каналда 16 километр, Кильский каналы — 12,4, Панама каналы 2,4 километр казылган.

Капиталистик илдәрҙә каналдар төҙөлешендәге был темптарҙы сталинсе эпоханың бөйөк төҙөлештәрендәге темптар менән һис тә сағыштырып булмай.

Көньяк Украина һәм Төньяк Кырым каналдарының, Төп Төркмәнстан каналының, Волга-Дон каналының, уларҙағы һыуландырыусы һәм һуғарыусы селтәр менән бергә, дөйөм оҙонлоғо күп меңләгән километрҙар иҫәпләнә. Шулай итеп, һәр бер йылда тиҫтәләгән һәм йөҙләгән километр оҙонлокта ғына түгел, ә меңләгән километр оҙонлокта каналдар төҙөргә, йәғни капиталистик илдәрҙә каналдар төҙөгәндә булғанға карағанда йөҙ тапкырҙар артык төҙөргә тура килә.

Панама каналында бөтәһе 212 миллион кубометр ер эше, 3,8 миллион кубометр бетон эше эшләнгән, йәғни бер йылға 6,4 миллион кубометр ер эше һәм 0,11 миллион кубометр бетон эше тура килгән.

Беҙҙең төҙөлештәрҙә иһә бер йыл эсендә үткәрелә торған ер эшенең һәм бетон эшенең күләме Панама каналын төҙөгәндә 33 йыл эсендә үткәрелгән ер һәм бетон эштәренән бер нисә тапкырға артык.

Һуңғы йылдарҙа капиталистик илдәрҙә гидротехник төҙөлеш бик нык кыҫкартылды. Кризистар һәм эшһеҙлек, киң массаларҙың хәйерселәнеүе, бик нык коралланыу, агрессия һәм яңы һуғышка әҙерлек политикаһы — хәҙерге вакытта империализм осороноң капиталистик системаһын бына шулар характерлай.

Совет государствоһы илдең етештереүсе көстәренең яңы көҙәтле сәскә атыуын, халыктың тормош кимәлен артабан күтәреүҙе тәьмин итеүгә йүнәлдерелгән тыныс, ижади эшмәкәрлекте ғәмәлгә ашыра.

Илебеҙ төҙөлештәрендәге юғары темптар хеҙмәтте социалистик ойоштороуға нигеҙләнә, ә был иһә көҙәтле совет техникаһына таяна.

Сталинсе төҙөлештәрҙе тормошка ашырыу элек булмаған гидротехник корылмаларҙы, һуғарыусы һәм һыу менән тәьмин итеүсе системаларҙы проектлаштырғанда, уларҙы төрлө тәбиғи шарттарҙа төҙөгәндә һәм эксплуатациялағанда килеп сыға торған бик ҙур кыйынлыктарҙы еңеп сығыу менән бәйләнгән. Ленин — Сталиндең бөйөк партияһы тарафынан тәрбиәләнгән совет ғалимдәре, инженерҙәре, эшселәре һәм колхозсылары килеп сыға торған кыйынлыктарҙы үҙҙәренең ижади хеҙмәте, эштә новаторлык методтары кулланыу менән уңышлы еңеп сығалар.

Волга-Дон каналы төҙөлеше бының асык күрһәткесе булып тора. Хеҙмәт ойоштороуҙағы юғары кимәл, промышленностең төҙөлеште тәьмин итеп торған машина техникаһы элек билдәләнгән эш сроктарын ике йылға кыҫкартырға һәм 1952 йылда каналды эксплуатацияға индереүгә мөмкинлек бирҙеләр.

Цимлянск гидроузелы төҙөлешендә ер казыусы машиналар бер үк вакытта ерҙе казыйҙар һәм кәрәкле урынға килтереп һалалар. Ошондай машина бер ай эсендә 250 мең кубометр ер эше башкара. 15 мең самаһы ер казыусы эшсе эшләйәсәк эште бер үҙе эшләй.

Волга-Дон каналы төҙөлешендә атлап йөрөүсе көҙәтле экскаваторҙар кулланыла, уларҙың сүмесе бер юлы 14 кубометр тупрак ала, уларҙың стрелаларының оҙонлоғо 65 метр. Был машина 8000 самаһы ер казыусыны алмаштыра.

Бетон һалыу эштәрендә ҙур үҙгәреш тор булды. Төҙөлештәрҙә бетон заводтары эшләй, уларҙа бөтә етештереү процестәре автоматлаштырылган. Блоктарҙы һәм котлованларҙы бетонлау машиналар тарафынан эшләнә.

Бөтә был беренсе класлы техникаға тәжрибәле кадрҙар — катмарлы яңы машиналарҙы һәм механизмдарҙы якшы үҙләштергән инженерҙар, техниктар һәм эшселәр идара итәләр.

Большевиктар партияһы, Совет государствоһы коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен кыҫка срокта төҙөү өсөн бөтә кәрәкле нәмәләр менән тәьмин итте.

Профессор В. Шауман,
техник фәндәр докторы.

Малсылыҡ фермаларын механизациялаштырыуға ныҡлы иғтибар

Ваҡ колхоздарҙы эреләтеү фермаларҙа малдар тәрбиәләүҙе яҡшыртыуға, уның продуктивлеген күтәреүгә тулы мөмкинлектәр тыуҙырҙы.

Малсылыҡтың артабан үҫеүе бесән сабыу һәм мал аҙығы силослау, кәтүлектәрҙе, болонлоҡтарҙы яҡшыртыу, шулай уҡ фермаларҙа ауыр эштәрҙе — һыйыр һауыу, һарыҡ йөнөн ҡырҡыу, мал аҙығы әҙерләү һәм башҡа эштәрҙе механизациялаштырыуҙы талап итә.

Ауыр эштәрҙе механизациялаштырыу фермаларҙа хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, малдарҙың продукт биреүсәнлеген арттырыуға һәм бик күп эш көсөн башҡа эштәргә бушатыуға мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, фермаларҙа һыйыр һауыуҙы электр көсө менән башҡарыу һыйыр һауыусылар һанын ике тапҡырға кәметә һәм шул уҡ ваҡытта һыу эсереүҙе автоматлаштырыу һыйырҙарҙың һөт биреүен 15 процентҡа арттыра.

Һарыҡтарҙың йөнөн электр көсө ярҙамында ҡырҡыу бирҙән, йөн алыуҙы арттырһа, икенсенән, бик күп эшсе көсөн башҡа эшкә бушатыуға мөмкинлек бирә.

Мал аҙығы әҙерләүҙе механизациялаштырыу бесән, һалам һәм башҡа бик күп төр аҙыҡтарҙы әҙерләп ашатыу эшен яҡшырта, уны тәмләндерә һәм малдарҙың организмында аҙыҡты яҡшы үҙләштереүгә ярҙам итә.

Шул уҡ ваҡытта малсылыҡ фермаларын механизациялаштырыу унда таҙалыҡ һаҡлауға һәм малдарҙы яҡшы тәрбиәләүгә мөмкинлек бирә.

Партия һәм хөкүмәт ҡарары нигеҙендә колхоздарҙа малсылыҡтағы күп хеҙмәт һалыуҙы талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу нигеҙҙә МТС-тар ярҙамында башҡарылырға тейеш. Һәр бер МТС колхоздар менән төҙөшкән договор нигеҙендә бесән сабыу, мал аҙығы силослау, кәтүлектәрҙе һәм болонлоҡтарҙы яҡшыртыу саралары үткәреү менән бергә, фермаларҙа механизациялаштырыу буйынса ла колхоздарға эшлекле ярҙам күрһәтергә бурыслылар.

Республикабыҙҙың ҡайһы бер машина-трактор станциялары үҙған йыл бесән сабыу һәм мал аҙығы силослау һәм фермалағы башҡа күп хеҙмәт һалыуҙы талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыуҙа ҙур ғына уңыштарға өлгәштеләр. Мәҫәлән, Сибай МТС-ы трактор бесән сапҡыстары менән 4267 гектар майҙанда үлән сапты, Баҡалы МТС-ы 2273 тонна мал аҙығы силосланы. Шулай уҡ Хәйбулла, Бөжәр, Баймаҡ МТС-тары ла силос һалыуҙы уңышлы үткәрҙеләр.

Байғужа МТС-ы хеҙмәтләндергән «Коммунар» колхозында фермаларҙы һыу менән тәьмин итеү, һалам турағыс, мал аҙығы ваҡлауғыс, һарыҡ йөндәрен ҡырҡыу һәм башҡа күп кенә эштәр электр ярҙамында башҡарыла. Был, фермаларҙа эшләүселәрҙең һанын байтаҡ кәметеүгә мөмкинлек бирҙе.

Бүҙәк МТС-ы Тимирязев исемендәге колхозда һыйыр һауыуҙы һәм мал аҙығы әҙерләүҙе механизациялаштырҙы. Баҡалы районы Карл Маркс исемендәге колхозда ла һыйыр һауыу электр көсө ярҙамы менән башҡарыла.

Белорет районы Точисский исемендәге колхозда һарыҡ йөнөн электр көсө менән ҡырҡыу был эштән бик күп эшсе көсөн бушатыуға мөмкинлек бирҙе. Бында 10 сәғәт эсендә генә һәр бер машина менән 64-әр һарыҡтың йөнө ҡырҡылды.

Ләкин республикабыҙҙың колхоздарында фермалардағы күп хеҙмәт һалыуҙы талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу малсылыҡтың көндән-көн үҫә барған талаптарын һис тә ҡәнәғәтләндерә алмай, был эш бик артта ҡала әле. МТС-тарҙа һәм колхоздарҙа булған техника бик насар файҙаланыла.

Күп кенә район ауыл хужалығы бүлектәре, МТС директорҙары һәм колхоз председателдәре был алдынғы методтарҙы малсылыҡҡа индереү мәсьәләһе менән һис ҡәнәғәтләнмәҫлек шөғөлләнәләр.

Кушнаренко, Мишкә район ауыл хужалығы бүлектәренең мөдирҙәре Усманов, Ғәдиев иптәштәр ошо көнгә тиклем хатта ҡайһы бер колхоздарҙа үткәрелергә тейешле механизация сараларын да билдәләмәгәндәр, райондағы машина-трактор станцияларына был эш буйынса конкрет задание лә бирмәгәндәр.

Борай, Балтач, Баймаҡ район ауыл хужалығы бүлектәре лә был өлкәлә конкрет бер нәмә лә эшләмәйҙәр һәм хатта колхоз фермаларында машиналарҙы һәм йыһаздарҙы урынлаштырыуға проекттар ҙа төҙөмәгәндәр.

Дүрәс, Елдәр, Өрйәҙе МТС-тарының директорҙары Степанов, Лысенко, Осотов иптәштәр ҙә монтаж эштәре үткәреү буйынса колхоздар менән өҫтәмә договорҙар төҙөүҙе әле булһа тамамламағандар һәм машиналарҙы һәм йыһаздарҙы урынлаштырыу өсөн монтаж бригадалары ойоштормағандар.

Тәтешле, Услы, Шаранбаш-кнәз һәм башҡа МТС-тарҙа малсылыҡ фермаларын механизациялаштырыу буйынса өлкән механиктәр туранан-тура үҙ эштәрендә түгел, ә башҡа эштәрҙә файҙаланылалар.

Күп кенә МТС етәкселәре был эш менән әле булһа серьез шөғөлләнгәндәре юҡ, уны һаман да һуңғы сираттағы эш итеп иҫәпләп килләр. Мәҫәлән, Иглин районы «Брпвайс-Райс», Өфө районы «Парижская коммуна» колхоздарында мал аҙығы әҙерләүҙә, кәтүлектәрҙе һәм болонлоҡтарҙы яҡшыртыуҙа, шулай уҡ фермаларҙа машиналар, йыһаздар урынлаштырыу өсөн монтаж эштәрен үткәреүҙә эшлекле саралар күрелмәй.

Хәҙер колхоздарҙа был эште уңышлы башҡарып сығыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Бурыс — малсылыҡҡа яңы техниканы, уның яңы алымдарын ҡыйыу индереүҙән, механизацияны общественный малсылыҡты үҫтереүгә һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреүгә хеҙмәт иттереү өсөн киң файҙаланыуҙан тора.

Е. Тулбаев,

БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһы МТС Управлениеһенең кәнбайыш бүлеге начальнигы.

Малдар һаны үҫә

Бәләбәй. Районда малсылыҡ эшенә ныҡ иғтибар итлә. Колхоздарҙа бесән өсөн бер йыллыҡ үлән сәсеү планы 168 процентҡа үтәлде.

«14 лет Октября», Поскребышев һәм Чапаев исемендәге колхоздарҙа фермаларҙы ремонтлау, яңы һарайҙар төҙөү эше ҡыҙыу бара.

Ворошилов исемендәге колхоздың йылҡысыһы иптәш Кудрин быйыл үҙе тәрбиәләгән 13 бейәнән 13 ҡолон, Булганин исемендәге колхозда иптәш Шаһиев 10 бейәнән 10 ҡолон алды. Районда быйыл яңынан 3 колхозда йылҡысылыҡ буйынса тоҡом фермаһы ойоштороло.

К. Абдуллин.

Балаларҙы кластарға уҡыуҙар тамамланды. Балалар йәйге ялға сыҡтылар.
Һүрәттә: А. Матросов исемендәге культура һәм ял паркында балалар ял итәләр.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

Филармония артистәре йәйге гастролгә киттеләр

Өфө ҡалаһы Башҡорт государство филармонияһының В. Хәсәнов етәкселегендәге эстрада бригадаһы республика колхоздарына китте.

Бригада составында артистарҙан Ғәйпетдинова, Ғәппева, Зиннәтуллина, Ғәлиев, Хәспетдинов һәм баянист Миңнеханов иптәштәр бар. Улар Кушнаренко, Саҡмағош, Илеш, Краснокам, Яңауыл, Борай, Тәтешле, Балтач, Дүртөйлө һәм Бөрө районда-рында булып, был райондар хеҙмәтсәндәренә Береговаяның «Препарат ЦФА», Волиндең «Немка», Чеховтың «Яҡшы бөтөн эш хәйерле» тигән пьесаларын күрһәтәсәктәр, акробатик этюд, совет композиторҙарының әҫәрҙәре, башҡорт, татар халҡ йырҙары, бейеүҙәре, нәфис һүҙҙәр һәм башҡа музыкаль номерҙәр менән сығыш яһаясаҡтар.

З. Миңнеханов.

Телеграф аша ярыш

4 июнда физкультура һәм спорт эштәре буйынса Бөтә Россия комитеты РСФСР беренселегенә өсөн телеграф аша шахмат-шашка ярышы үткәрә башланы.

Ярышта Өфө ҡалаһы спортсменлары ла ҡатнашалар. Улар Челябе, Щербаков, Пенза һәм Курган ҡалаларының командалары менән осрашасаҡтар.

Уйын бөтә ҡалалар менән дә бер үк ваҡытта алып барыла.

Шахмат-шашка буйынса телеграф аша ярыш был төр спортты тағы ла алға ебәреүҙә һәм уны популярлаштереүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булып тора.

Ф. Симкин,
өлкән судья.

Институтта экзамендәр

Тимирязев исемендәге Башҡорт государство педагогия институтының бөтә факультеттарында ла государство экзамендәре башланды.

Институттың 4 курс студенттәре марксизм-ленинизм нигеҙҙәре фәне буйынса экзамендәр тапшырыуҙа айырыуса ҙур ойошҡанлыҡ һәм теоретик әҙерлекле булыуҙарын күрһәттеләр.

Сталин стипендиаттары Әмиров, Зарипов, Закиров иптәштәр тәүге экзаменде «отличнота» тапшырҙылар.

А. Абдуллин.

ЗВЕРИНЕЦ ӨФӨЛӘ

Киҫә Өфөнөң Матросов исемендәге үҙәк культура һәм ял паркында СССР Министрҙәр Советы эргәһендәге искусство эштәре комитетына ҡараған циркообъединениенең күсмә государство зверинецы асылды.

Ул Өфөлә бер ай буласаҡ. Унда бөтәһе 128 экспонат иҫәпләнә. Бында баҫыу һәм һыу хайуандары, йәнлектәр, төрлө ҡоштар бар.

Улар араһында юлбарыҫ, Африка арыҫланы, Бенгаль инә арыҫланы, ҙур группа маймылдар, Гималай, Сирия айыуҙары, аҡ айыуҙар, айыу балалары, ишәк, ике үркәсле дөйә, ҡыр кәзәләре, лань һәм башҡалар бар.

Алтын балыҡтар, фазандар, төрлө өйрәктәр, ҡырағай ҡоштар, амазонка тутый ҡоштары тамашасыларҙы айырыуса ҡыҙыҡһындыра.

Зверинец иртәнге 9 сәғәттән төнгө 12-гә тиклем эшләй.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Ғафури районы Фрунзе исемендәге эрелөтелгән колхозда яңы радиоузел төҙөлә. Ул оҙаҡламай эшләй башлаясаҡ һәм «Правда», «Үҙән», Жданов, Чапаев, Мичурин исемендәге колхоздарҙы хеҙмәтләндерәсәк.

Ә. Даутов.

Баҡалы районында яңы инкубатор станцияһы төҙөлөп, эксплуатацияға тапшырылды. Хәҙер станцияға беренсе партия йомортҡалар һалынды ла инде.

Станция район колхоздарына сезонға 150 мең себеш бирәсәк.

Ш. Яхин.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 4 июнь. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары 4 июнда нәүбәттәге ултырышҡа йыйналдылар. Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

Хәбәр ителгәнсә, 31 майҙағы ултырышта АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре көнбайыш державалар делегациялары тарафынан 2 майҙа индерелгән көн тәртибенең өс вариантының береһе нигеҙендә 23 июлдә Вашингтонда дүрт держава сит ил эштәре министрҙәренең Кәңәшмәһен саҡырырға тәҡдим итеп, үҙ хөкүмәттәренең СССР хөкүмәтенә бер үк йөкмәткеле нотаһын СССР вәкиле Громыкоға тапшырҙылар. Билдәле булыуынса, көн тәртибенең был өс вариантында ла Американың хәрби базалары тураһындағы һәм СССР менән көнбайыш державалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең насарайыуының төп сәбәбе булып хеҙмәт иткән Атлантик пакт тураһындағы мәсьәлә юҡ. Ноталарҙа шулай уҡ, Париждағы әҙерлек кәңәшмәһендә көнбайыштағы өс держава тарафынан 2 майҙа индерелгән тәҡдимдәр буйынса министрҙәрҙең урынбаҫарҙары тулыһынса килешеүгә өлгәшә алмаһылар, тип һәтелә.

4 июндәге ултырышта А. Гро[...] Совет Хөкүмәте исеменән АҠШ, Вел[...]британия һәм Франция вәкилдәрен[...]рыла күрһәтелгән ноталарға Совет [...]күмәтенең яуабын тапшырҙы.

Великобритания вәкиле Дэвис, Со[...] нотаһын минең хөкүмәтем ентекл[...] уситә өйрәнәсәк һәм үҙ хөкүмәтем [...] ҡарасаҡ ҡарарҙы алдан маҡтарға [...] ләмәйем, тип белдерҙе. Ләкин [...] «тәүге иҫкәртеү» тәртибендә, СССР [...]гацияһы Атлантик пакт һәм АҠШ-[...] хәрби базалары тураһындағы мәсьә[...] көн тәртибенә индереүҙе талап [...] урынбаҫарҙарҙың кәңәшмәһен дауам [...] тереү бөтөнләйгә файҙаһыҙ» буласаҡ тип иҫәпләүен белдерҙе.

Джессеп һәм Пароди шулай уҡ Сов[...] хөкүмәтенең нотаһын үҙ хөкүмәттәре[...] тапшырасаҡтарын әйттеләр.

Председателлек итеүсе Пароди нәүбәттәге ултырышты 6 июнгә билдәләргә тәҡдим итте, был ваҡытҡа көнбайыштағы өс держава хөкүмәттәре Совет хөкүмәтенең нотаһына ҡарата үҙ мөнәсәбәттәрен билдәләй алырҙар, тип ышаныс белдерҙе.

Шуның менән ултырыш ябылды.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 6 июнь. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһы бөгөн, Корея Халҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән тығыҙ бәйләнештә хәрәкәт итеп, бөтә фронттарҙа ла Америка-Англия интервенттәре ғәскәрҙәренең контратакаларын уңышлы кире ҡағып, уларҙың йәнле көсөнә һәм техникаһына ауыр юғалтыуҙар килтерәләр, тип хәбәр итте.

Самолеттарға атыусы уҡсылар [...]дың 4 самолетын атып төшөргәндәр.

Ҡытай балаларының һәләк булыуында ғәйепле сит ил миссионерҙәренә Ҡытай халҡ судының приговоры

ПЕКИН, 6 июнь. (ТАСС). Синьхуа агентствоһының Нанкиндағы хәбәрсеһе, Нанкин халҡ суды етем балалар өсөн католик приютында һәм Нанкиндағы больницала эшләүсе 7 сит ил монахиняларының эшен тыңланы. Улар Ҡытай балаларына мәрхәмәтһеҙ мөнәсәбәттә булыуҙа ғәйепләнәләр, шундай мөнәсәбәт бик күп балаларҙың һәләк булыуына килтергән.

Төрлө документтәр, шаһиттарҙан яуап алыуҙар һәм балаларҙың мәйеттәрен тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә 1948 йылдың ғинуарынан алып 1950 йылдың июненә тиклем етем балалар приютында һәм ғүмәүле «Бэйши» балалар яслеһендә 550 бала булғаны белекле. Шуларҙан 372 бала үлгән. 1950 йылдың июненән алып 1951 йылдың апреленә тиклем был йорттарҙа тағы ла 101 баланың үлеүе беленде.

Тере ҡалған 58 бала бик ныҡ ябыҡҡан, 21 бала туберкулез менән ауырый. 33 бала — тире ауырыуы. Ҡайһы бер балалар бер үк ваҡытта бер нисә ауырыу менән яфаланалар.

19 апрелдә етем балалар приюты территорияһындағы ҡәберлектән балаларҙың 120 мәйете алынған. Ҡайһы бер балаларҙың терелай күмелеүе беленде.

Мари Жозеф Баруа (француженка), Мария Анжелика де Сибра (португалка) һәр береһе унар йылға төрмәгә ябылырға хөкөм ителделәр: Марсель Аше (француженка), М. Бланшери (француженка), Розалия Штейнеб (австрийка), Тулина Вебер (полька) үҙ ваҡифаларына еҫкерсел һалҡын ҡарағандары өсөн, суд приговоры буйынса Ҡытайҙан һис ҡасан кире ҡайтмаҫлыҡ итеп һөрөлергә тейештәр. Тикшереп ултырған ваҡытта ғәйебен танып ғәфү үтенгән, ғәйебен белдергән һәм ғәйебе артыҡ ауыр булмаған Замбиаси Бармен (итальянка) төрмәнән азат ителде һәм уға билдәле срок эсендә Ҡытайҙан китергә бойороҡ бирелде.

Германия Демократик Республикаһында һәм Ҙур Берлиндең демократик секторында халҡтан һорау алыуҙың тәүге һөҙөмтәләре

БЕРЛИН, 6 июнь. (ТАСС). Германия Демократик Республикаһында халҡтан һорау алыуҙы үткәреүҙең етәксеһе министр Штейнгоф бөгөн Германия Демократик Республикаһының президенты Вильгельм Пиккә Германия Демократик Республикаһында һәм Ҙур Берлиндең демократик секторында 1951 йыл 3 июнь 8 сәғәттән алып 5 июнда 20 сәғәткә тиклем үткәрелгән халҡтан һорау алыуҙың тәүге дөйөм һөҙөмтәләрен белдерҙе. Германия Демократик Республикаһында һәм Ҙур Берлиндең демократик секторында тауыш биреү хоҡуҡы булған бөтә 13.697.549 кеше теркәлгән, шуларҙан халҡтан һорау алыуҙа 13.618.724 кеше ҡатнашҡан. Был 99,42 процент тәшкил итә.

Тауыштарҙы иҫәпләгәндә 13.581.099 бюллетень яраҡлы тип һәм 37.625 бюллетень яраҡһыҙ, тип табылған.

«Эйе» тигән яуап менән (билдәле булыуынса, немец халҡының хәл итеүенә шундай һорау ҡуйылған: «Һеҙ Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда уҡ Германия менән ярашыу договоры төҙөүҙе яҡлап сығыш яһайһығыҙмы» — ред.) 13.034.477 бюллетень бирелгән, был 95.98 процент тәшкил итә, «юҡ» тип яуап бирелгән бюллетендәр 546.622 булған, был 4.02 процент тәшкил итә. Халҡтан һорау алыу бер ниндәй ҙә ваҡиғаларһыҙ үткән һәм Германия Демократик Республикаһы халыҡ палатаһының һәм хөкүмәтенең ҡарары нигеҙендә закон положениеларына тулыһынса ярашлы үткәрелгән.

Был һөҙөмтәләр немец халҡының бердәм күңеллелеген һәм тупланғанлығын һәм уның тыныслыҡ һөйөүсе бөтә халыҡтар менән бергә Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда ярашыу договоры төҙөү өсөн көрәште еңеүгә тиклем алып етерергә әҙер тороуын бөтә донъяға күрһәтәләр.

КИНО

„Тыныслыҡ бөтә донъяла еңер“

Тыныслыҡ яҡлылырҙың Икенсе Бөтә Донъя конгресы тураһында документаль фильм

1945 йылда көнбайышта герман фашизмен һәм көнсығышта милитаристик Японияның хәрби машинаһын тар-мар иткән Советтар Союзы донъялағы бөтә кешеләргә тыныслыҡ һәм бәхет теләне. Кешелек күге күңмегә булһа ла һуғыш ҡурҡынысынан таҙарып ҡалған кеүек ине. Ләкин ғәмәлдә былай булып сыҡманы, яңынан һуғыш ҡурҡынысы болоттары ҡуйыра башланы. Немец фашизмен Америка-Англия империалистәре алыштырҙылар.

Икенсе бөтә донъя һуғышы тамамланыуға биш йыл үтте. 1950 йылдың кәре ине. Американың империалистик круг газеталары донъяла тыныслыҡ мәсьәләһенә ҡарата үҙҙәренсә эш күрҙеләр. Улар ябай кешеләрҙе алдарға, йомшаҡ күңеллеләрҙе ҡурҡытырға иҫәп тотоп, уларға үҙҙәренең ихтыярҙарын көсләп тағырға теләнеләр.

Шуның менән бергә Америка империалистәре совет ҡоралды көстәренең япон империализмына яһаған емергес һөжүмдәре һөҙөмтәһендә азат тормошҡа күсергә мөмкинлек алған Төньяҡ Корея еренә яңынан бомба һәм орудие туптары шартлауын килтерҙеләр, Американың летчиктәре Корея ҡалаларына һәм ауылдарына меңләгән бомбалар ырғыталар ине, һуғыш уты үҙенең бәйһонлорҡһоҙлоғон һәм азатлығын яулап алған бөйөк Ҡытай халҡының тир һәм ҡан менән һуғарылған еренә урмалай башланы.

Трумэн менән Макартур Тымыҡ Океандағы утрауҙарын береһендә осрашалар. Тыныслыҡ һөйөүсе намыҫлы кешеләрҙең теләгенә яуыз хыянат эшләгән Макартур үҙенең бысраҡ йөҙән гәҙел халҡ хөкөмөнән йәшереп ҡалдырырға теләгән һымаҡ фуражкаһын тәкә итеп, күҙенә төшереп кейгән. Улар — ҡанға һыуһаған агрессорҙар Корея ерендә башланған агрессив кампанияның уңышлы дауам итеүенә һәм тамамланыуына ышаналар.

Америка империализменең бөтә донъяла хакимлек итеүгә йүнәлдерелгән шашҡан пландары буйынса эш көнбайышта ла йәйелдерелде. Үҙҙәренең халыҡтарының интересторен долларға һатҡан Көнбайыш Европа илдәре «Маршалл планы» тип аталған ямаҡаты сыҡҡан әләмәккә эләктеләр. Америка уларға һуғыш ҡоралдары ташый. Францияға Американан океан аша пушкалар килтерелә. Был буласаҡ һуғыш өсөн. Ләкин Франция докерҙары уларҙы бушатмайынса, кире борол ебәрәләр.

Империализм яңы һуғышты алып барыу өсөн һалдаттар эҙләй. Совет республикаһы биш көндә саҡта уҡ уға ҡаршы 14 илдең походын ойоштороған консерватор Черчилль һәм Бельгия социалисы Спаак был мәсьәләне гитлерсыларға Америка ҡоралын биреү юлы менән хәл итергә кәңәш итәләр.

Ошо уҡ йылдың көҙөндә, бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәштең башында торған Советтар Союзында тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙа сталинсе планды тормошҡа ашырыу буйынса ижади эш ҡайнай ине. Уның Берләшкән Милләттәр Ойошмаһындағы вәкиле Вышинский совет иленең тыныслыҡҡа арналған тәҡдимдәрен яңынан индерә. Ләкин улар ҡабул ителмәй. Кешеләр Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы төҙөлгәндә уға ҙур ышаныс күрһәткәйнеләр. Ләкин Америка диктатында ул кешелектең ышанысын аҡлай алманы.

Ошо шарттарҙа тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу өсөн тыныслыҡтың Бөтә Донъя конгресына әҙерлек ҡеүәтлә тулҡын булып йәйелде. Халыҡтар Икенсе Бөтә Донъя конгресына делегаттар һайланылар.

Великобританияның эре промышленность үҙәге — Шеффилд. Бында ҙур завод корпустары һәм уларҙың ҡуйы төтөн сығарған ҡалын торбалары күренә. Эшселәр йәшәүсе ошо районда үткәрелергә тейешле булған конгрестең асылыу көндәре килеп еткәс, делегаттарҙың бик күбеһе юлға сыҡҡас, Англияның премьеры Эттли унда конгрестең йыйылыуына рөхсәт итмәү тураһында бойороҡ бирҙе... Был тыныслыҡ конгресын өҙөүгә йүнәлтелгән сара ине. Ләкин һуғыш уты тоҡандырырға теләүселәрҙең иҫәбе хата ине. Конгресты Варшавала үткәрергә, тип ҡарар ителде.

Варшава! Икенсе бөтә донъя һуғышын сисеп ебәргән герман фашизменең емереү, бәхетһеҙлек килтергән тәүге походтарының береһен кисергән ҡала. Варшава эшселәре тыуған ҡалаларын өр яңынан төҙөйҙәр, ул элеккегә ҡарағанда тағы ла матурыраҡ итеп төҙөлә. Социализм юлына аяҡ баҫҡан илдең ысын ижад менән шағәлләнгән кешеләре уға үҙҙәренең бөтә һәләтлектәрен, тырышлыҡтарын бирәләр.

«Польша һүҙе йорто». Был план буйынса 8 айҙан төҙөлөп бөтөргә тейешле бина. Унда планды үтәү өсөн ныҡышмалы көрәш бара. Ләкин был темп ҡына хәҙер етерлек түгел инде. Бинаның 8 айҙан ғына төҙөлөп бөтөүе уларҙы ҡәнәғәтләндерә алмай. Сенки Шиффилдта үткәрергә мөмкин булмаған конгресс Варшавала, типография машиналары ҡуйылырға тейешле булған ошо цехта үткәрелергә тейеш. Тыныслыҡ яҡлыларҙың Польша комитеты председателе төҙөлөш эшселәре янына килеп үткәргән митингелә улар алдына был цехты 8 көн эсендә төҙөп бөтөп булырмы?—тигән мәсьәлә ҡуйҙы. Конгрестең йыйылыуы һәм эше шуға бәйләнгән. Яуап бер: 8 айға планлаштырылған эште — цехты төҙөүҙе 8 көндә тамамларға.

Һәм был ошолай булды ла.

Был ваҡытта тыныслыҡ һөйөүсе халҡ вәкилдәре өсөн сиктәре ябыҡ булған Англиянан пароходтар, поездар, самолеттәр Варшаваға табан юл алдылар.

Варшава хеҙмәтсәндәренең тырышлығы менән 8 көн эсендә әлгәртелгән ҙур залда тыныслыҡ яҡлыларҙың Икенсе Бөтә Донъя конгресы йыйналды.

Тыныслыҡ яҡлыларҙың даими комитеты председателе профессор Фредерик Жолио Кюри конгресты аса. Тыныслыҡ эшен ҡайнар яҡлаусылар бер-бер артлы трибунаға күтәреләләр. Улар 80 илдән килгән делегаттар. Трибунанан сығыш яһаусы ораторҙың телмәре бында ошонда бер үк ваҡытта 9 телдә тапшырыла.

200 миллионлы совет халҡының вәкиле яҙыусы Александр Фадеевтең ялҡынлы һүҙҙәре яңғырай: ул 1951—1952 йылдарҙа бөтә ҡоралды көстәрҙе—ерҙәге, һауалағы көстәрҙе һәм хәрби диңгеҙ көстәрен дә индереп 1/3-тән алып 1/2-гә тиклем тигеҙ рәүештә ҡыҫҡарта барыу тураһында тәҡдим индерә.

Был — тыныслыҡ һөйөүсе, уны батыр яҡлаусы совет халҡының бердәм теләге. Конгреста ҡатнашыусылар уны ҡул сабыуҙар менән ҡаршылайҙар.

Үҙенең бойондороҡһоҙлоғо өсөн геройҙарса көрәшеүсе Корея халҡының вәкиле Пак Ден Ай трибунаға күтәрелә. Ул конгреста ҡатнашыусыларға тыуған илендә үҙ күҙе менән күргәндәре тураһында тулҡынландырғыс итеп һөйләй. Америка-Англия империалистәре килтергән ҡот осҡос күренештәр күҙ алдынан үтә: һауала бомбардировщиктәр тулҡын артынан тулҡын булып осалар. Бомбалар торлаҡ йорттарын емерәләр, йәш балалар, ҡарттар, әсәләр ҡаны аға бында. Үлгән әсәләр эргәһендә үкһеп-үкһеп, һыңдары ҡатҡансы йәш балалар илай... Үҙенең балаларын, торор урынын юғалтҡан әсә аҡылдан яҙа. Корея халҡы өҫтөндә ҙур бәхетһеҙлек.

Ләкин кешелек Америка-Англия империалистәрен һәм уларға булышлыҡ итеүселәрҙе бер ваҡытта ла ғәфү итмәҫ, улар гәҙел хөкөм алдына баҫырҙар!

Һуғышҡа ҡаршы, тыныслыҡ өсөн көрәшселәрҙең дөйөм теләктәрен яуҙәләнделәрен, ошо трибунанан совет яҙыусыһы Илья Эренбургтың һүҙҙәре бөтә донъяға ишетелде:

— Беҙ һуғышҡа юл ҡуймабыҙ! Беҙ кеше күкрәгенә төбәлгән көбәктәрҙе ситкә ҡаратырбыҙ.

Һуғыштың бөтә ауырлығын үҙе белгән һәм уны күрә алмаған совет халҡы делегаты булыуым сифатында, мин уларҙы беҙҙең дошмандарыбыҙ итеп күрһәтергә тырышҡан кешеләрҙең ҡулдарын — американлыларҙың, инглиздарҙың һәм француздарҙың ҡулдарын, донъяла ошо ҡулдарҙы айырырлыҡ көстөң булмауына ғәрәп ышанған халда, ҡыҫам!

Совет делегаты һуғышты пропагандалаусыларҙы бөтә илдәрҙә лә енәйәт яуаплылығына тарттырыу тураһында закон булдырырға тәҡдим итте.

Тыныслыҡ өсөн көрәш байрағы аҫтына бөтә милләт кешеләре баҫалар. Тыныслыҡты бөтә намыҫлы кешелек теләй.

Польша республикаһының документаль фильмдәр студияһы эшләп сығарған документаль фильм ошо илге көрәште күрһәтә.

З. Ишмаев.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында—«КӨНБАЙЫШТАҒЫ СИК» Башлана кис 8 сәғәт [...] минутта.

«Октябрҙә» — «ТЫНЫСЛЫҠ БӨТӘ ДОНЪЯЛА ЕҢЕР».

«Салауатта» — «НЕБЕСНЫЙ ТИХОХОД».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа «ЗОЛУШКА».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-67, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П 02511 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се йыл сыға.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

№ 112(8829)
1951 йыл
9
ИЮНЬ
шәмбе

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумын һайлау тураһында (1-се бит).
Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик республикаһының 1951 йылға бюджеты тураһында Закон (1-се бит).
Башҡорт АССР-ының Хөкүмәтен — Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советын төҙөү тураһында (1-се бит).
БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ УЛТЫРЫШТАРЫ. Башҡорт АССР-ының 1951 йылға бюджеты һәм 1950 йылғы бюджеты үтәлеше тураһында доклад буйынса фекер алышыуҙар депутат Н. Р. УРАЗБАЕВ телмәре (2-се бит).
Башҡорт АССР-ы Конституцияһының (Төп Законының) 108-се статьяһын үҙгәртеү тураһында Закон (3-сө бит).
Башҡорт АССР-ы Конституцияһының (Төп Законының) 22-се статьяһын үҙгәртеү тураһында Закон (3-сө бит).
СОВЕТ ФӘНЕ — КОММУНИЗМДЕҢ БӨЙӨК ТӨҘӨЛЕШТӘРЕНӘ. В. Шаумян. — Ер ҡуғарыуҙың алдынғы методтары (3-сө бит).
Республика хеҙмәтсәндәре СССР Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы ойошторолоуын шатлыҡ һәм ғорурлыҡ менән билдәләйҙәр (3-сө бит).
Ф. Бикбов. — Сәсеүлектәрҙе ҡыяҡлы үләндәргә (4-се бит).
Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе тураһында (4-се бит).
Корейҙағы ваҡиғалар (4-се бит).

Алдынғы тәжрибәләрҙе — бөтә предприятие коллективтарына!

Совет кешеләре — социалистик тормошто ижад итеүселәр. Улар коммунистар партияһы һәм бөтә прогрессив кешелектең гениаль юлбашсыһы бөйөк Сталин етәкселегендә коммунизм төҙөйҙәр.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ план совет кешеләренең ижади хеҙмәте менән бик күп арттырып үтәлде. Илебеҙҙә промышленность продукцияһы етештереү, 1945 йыл менән сағыштырғанда, 73 процентҡа үҫте. Ауыл хужалығы ла һуғышҡа тиклемге кимәлде уҙып, байтаҡ алға киткә һәм хеҙмәтте механизациялаштырыу юғары күтәрелде. Предприятиеләрҙә күп кенә инженер-техник новаторҙар үҫеп сыҡтылар, бригадаларҙан башлап цех һәм тотош предприятиелар стахановсы коллективҡа әйләнделәр.

Был ҙур тарихи еңеүҙәребеҙҙең сере, бөтәһенән элек, хеҙмәтсәндәрҙең коммунизм төҙөүҙә актив ҡатнашыуҙарында, алдынғы эш методтарын производствоға ҡыйыу индереп барыуҙа һәм һәр бер яңылыҡты практикала киң ҡулланыуҙа. **«Был, барыһынан да элек, социалистик ярышты һәм ударсылыҡты йәйелдереүҙә инженер-техник көстәр менән бергә бик ҙур энергия күрһәткән миллионлаған эшселәр һәм колхозсылар массаларының активлеге һәм үҙ-үҙен аямаусанлығы, энтузиазмы һәм инициативаһы»** тине иптәш Сталин.

Үҙ Тыуған иленә сикһеҙ бирелгән, коммунизм төҙөүҙең бөйөк идеялары менән рухланып эшләүсе совет кешеләренең производство методтарын камиллаштыреуҙа индергән вкладтары ҙур. Совет фәне барған һайын яңы алдынғы тәжрибәләр менән байытыла. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ новаторҙары Василий Матросов, Николай Российский, Лидия Корабельникова, Александр Чуткин, Владимир Ворошин, инженер Ковалев, нефтсе Аға Гусейн Кафаров һәм башҡа бик күптәрҙең исеме бөтә донъяға билдәле.

Производство алдынғыларының ҡиммәтле эш тәжрибәләрен ҡулланып, республикабыҙҙың промышленность предприятиелары, төҙөлөш ойошмалары һәм транспорт коллективтары государство планын үтәүҙә күренекле уңыштарға өлгәштеләр.

«Туймазынефть» тресында инженер Ковалев һәм нефтсе мастер Кафаровтың алдынғы эш методтарын ҡулланыу яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Нефть промыслалары планды арттырып үтәйҙәр. Бораулау темпы барған һайын күтәрелә. Нефть промыслаларында, бораулау конторалағында алдынғы методтарҙы өйрәнеү һәм тормошҡа ашырыу буйынса планлы эш алып барыла. Был маҡсатта махсус бюролар, бригадаларҙа, участкаларҙа инициатива төркөмдәре ойошторолған. Инженер-техник работниктар, алдынғы стахановсылар уларҙа төп ойоштороусы көс булып торалар.

Промыслаларҙың, бораулау контораларының партия, профсоюз ойошмалары алдынғы методтарҙы пропагандалау һәм уны киң массаларҙың достояниеһе итеү өсөн күп ойоштороу саралары тормошҡа ашыралар. Систематик рәүештә производство кәңәшмәләре саҡырыла, техник конференциялар үткәрелә. Алдынғы стахановсылар, новаторҙар, инженер-техник работниктар айырым бригадаларға, участкаларға шефлыҡ итәләр. ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитеты һуңғы көндәрҙә генә йәш стахановсыларҙың һәм новаторҙарҙың дүрт тапҡыр ҡала слетын үткәрҙе.

Күрелгән сараларҙың һөҙөмтәһе яҡшы. Техниканы файҙаланыу кимәле үҫә, алдынғылар һаны арта. Мастер иптәш Терпанцева етәкселек иткән нефть сығарыу участкаһы тотош стахановсы участкаға әйләнде. Күп кенә операторҙар 5-6 скважинаны хеҙмәтләндереүгә өлгәштеләр. Сидоренко, Социалистик Хеҙмәт Геройы Купцянов иптәштәрҙең һәм башҡаларҙың бригадалары инде станок айға 1100 — 1200 проходка метр тиҙлеге бирәләр.

Белорет ҡорос-сыбыҡ заводында инженер Ковалев методын ҡулланып, 17 производство участкаһында эш алымдарына хронометраж үткәрелде. Заводта стахановсылар мәктәбе эшләй.

Предприятие коллективтарының эшендә алдынғы методтарҙы ҡулланыу буйынса яҡшы өлгеләр күп кенә. Ләкин бөтә урында ла был мөһим мәсьәләгә тейешле әһәмиәт биреп еткерелә тип әйтеп булмай әле. Промышленностен, төҙөлештәрҙең, транспорттың айырым участкаларында хеҙмәт етештереүсәнлеген даими үҫтереү өсөн эске резервтар һис ҡәнәғәтләнмәслек файҙаланыла, сығарылған продукцияның сифаты насар булып ҡалыуҙа дауам итә. Бындай урындарҙа алдынғы тәжрибәләрҙе ҡулланыу мәсьәләһе урынһыҙ шапырыныуҙар, декларатив белдереүҙәр яҙыу менән генә алыштырыла. Социалистик ярышты эшлекле ойоштороу урынына формализмға юл ҡуйыла.

«Стәрлетамаҡстрой» тресында нәҡ бына ошондай картина инде. Һәйгә ософ төҙөлеш эштәрен йәйелдереү өсөн иң яҡшы ваҡыт булыуға ҡарамаҫтан, резервтар етерлек хәрәкәткә килтерелмәй, механизмдарҙы файҙаланыуҙа ҙур әйәһеҙлеккә юл ҡуйылған. Төҙөлеш участкалары етәкселәре коллективтарҙы төҙөлештә комплекс методын, алдынғы ташсы Диченко, штукатур Сычевтең эш алымдарын ҡулланыуға мобилизовать итмәйҙәр.

Республикабыҙҙың урман промышленносе предприятиеларында бик бай техника тупланған. Ләкин уларҙы рациональ файҙаланыуға, алдынғыларҙың эш өлгөһөн бөтә эшселәргә еткереүҙә леспромхоз етәкселәре тейешле иғтибар бирмәйҙәр. Бик күп механизмдар тупланған Ямаш йылға леспромхозында күпселек эшселәр нормаларҙы үтәп еткермәйҙәр.

Илебеҙҙә киң күләмдә коммунизм төҙөлештәре бара, Волгала, Днепрҙа, Донда, Аму-Дарьяла гигант электр станциялары, ҡеүәтле һыу каналдары барлыҡҡа килтерелә. Сталин эпохаһының был бөйөк төҙөлештәре промышленность предприятиелары, төҙөлөш ойошмалары һәм транспорт коллективтарынан тағы ла күп яҡшы эшләүҙе талап итә. Был шарттарҙа предприятиеларҙа алдынғы методтарҙы индереү айырыуса әһәмиәтле.

Күптән түгел ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты производство стахановсыларының ҡала йыйылышын үткәрҙе. Алдынғылар бында үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар. Был билдәле яңылыҡ идеяларын популярлаштырыуҙа мөһим сара. Алдынғы методтарҙы таратыуҙа производство кәңәшмәләре, эшселәрҙең инженер-техник работниктар менән дуҫлыҡта эшләүҙәре, күргәҙмә агитация, стена газеталары шулай уҡ ҙур урын тоталар.

Яңылыҡты тойоу, яңыса эшләү — совет кешеһенең, совет предприятиелары коллективтарының айырылғыһыҙ сифаты булып тора. Предприятиеларҙың етәкселәре, партия профсоюз ойошмалары алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалауҙа һәм производствоға индереүҙә планлы эш алып барырға бурыслылар. Алдынғы эш тәжрибәләре бөтә коллективтарҙың достояниеһе булырға тейеш.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумын һайлау тураһында

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы **ҡарар итә:**

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумын түбәндәге составта һайларға:

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе

Заһафуранов Фәйзерахман Заһафуран улы — Маядыҡ һайлау округынан депутат.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателенең Урынбаҫарҙары

Денисов Алексей Алексеевич — Яңы Артауыл һайлау округынан депутат.

Солтанова Фания Гәрәй ҡыҙы — Тәтешле һайлау округынан депутат.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретары

Йәркәев Ишмөхәммәт Әхмәтша улы — Ҡалтасы һайлау округынан депутат.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының членлары

Байрак Константин Алексеевич — Октябрьский һайлау округынан депутат.

Бердин Ғәли Иркәбай улы — Сайран һайлау округынан депутат.

Ваһапов Сабир Әхмәтйән улы — Сибай һайлау округынан депутат.

Дәүләтбаев Дәүләтҡол Дәүләтбай улы — Шеңгәкҡул һайлау округынан депутат.

Данилко Георгий Петрович — Көньяҡ һайлау округынан депутат.

Закиров Рәүф Абдулхаҡ улы — Нефть промыслаһы һайлау округынан депутат.

Капустин Николай Иванович — Горький һайлау округынан депутат.

Нафиков Фәсхетдин Һәләлетдин улы — Манауыҙ-Тамаҡ һайлау округынан депутат.

Наймушина Татьяна Елизаровна — Ҡыйғы һайлау округынан депутат.

Пацурия Шалва Мелитонович — Салауат һайлау округынан депутат.

Саяпов Тимер Шәймөхәмәт улы — Талбазы һайлау округынан депутат.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе
Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Секретары
И. ЙӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы, 6 июнь, 1951 йыл.

БАШҠОРТ АВТОНОМИЯЛЫ СОВЕТ СОЦИАЛИСТИК РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ 1951 ЙЫЛҒА БЮДЖЕТЫ ТУРАҺЫНДА

ЗАКОН

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы **ҡарар итә:**

1. Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы тарафынан тапшырылған Башҡорт АССР-ының 1951 йылға бюджетын доходтар һәм расходтар буйынса 966.669 мең һум суммала һәм бюджет средстволарының 1952 йылдың 1 ғинуарына күсеүсе ҡалдыҡтарын, район бюджеттарындағы маҡсатҡа йүнәлешле бюджет резервтарын да индереп, 38.200 мең һум суммала раҫларға.

2. Ошо Закондың 1 статьяһына ярашлы рәүештә Башҡорт АССР-ының республика бюджетын доходтар һәм расходтар буйынса 289.807 мең һум суммала һәм бюджет средстволарының 1952 йылдың 1 ғинуарына күсеүсе ҡалдыҡтарын 6.350 мең һум суммала раҫларға.

3. 1951 йылға райондарҙың һәм ҡалаларҙың бюджеттарын доходтар һәм расходтар буйынса һәм бюджет средстволарының 1952 йылдың 1 ғинуарына күсеүсе ҡалдыҡтарын түбәндәге суммаларҙа раҫларға:

Тәртип номерҙаре	Райондарҙың һәм ҡалаларҙың исемдәре	Доходтар һәм расходтар буйынса (мең һумдарҙа)	1952 йылдың 1 ғинуарына күсеүсе ҡалдыҡтар (мең һумдарҙа)
1.	Әбйәлил (Абзан)	4483,6	246,0
2.	Әбйәлил	7001,5	393,0
3.	Әлшәй	12007,5	617,0
4.	Архангель	7107,8	402,0
5.	Асҡын	8760,1	466,0
6.	Ауырғазы	11466,7	692,0
7.	Байҡыбаш	6753,9	376,0
8.	Баймаҡ	14592,8	589,0
9.	Баҡалы	10302,6	582,0
10.	Балтач	9441,0	530,0
11.	Бәләбәй	16240,2	710,0
12.	Белоҡатай	6834,5	348,0
13.	Белорет	12475,1	509,0
14.	Бишбүләк	9627,0	535,0
15.	Бөрө	16139,1	609,0
16.	Благовар	8317,7	471,0
17.	Благовещен	8028,2	316,0
18.	Бүздәк	8971,9	520,0
19.	Бәзәкә	7176,3	436,0
20.	Борай	9507,4	600,0
21.	Бөрйән	3835,5	184,0
22.	Воскресен	4518,1	233,0
23.	Ғафури	11410,4	563,0
24.	Дәүләкән	12203,4	517,0
25.	Дыуан	7485,5	400,0
26.	Дүртөйлә	10723,3	625,0
27.	Йәрмәкәй	8526,9	473,0
28.	Йылайыр	5722,2	285,0
29.	Зианчура	4462,6	233,0
30.	Иглин	9215,7	506,0
31.	Илеш	9999,0	598,0
32.	Ҡалтасы	8553,1	452,0
33.	Ҡандра	7327,8	410,0
34.	Ҡариҙел	6276,5	312,0
35.	Ҡырмыҫҡалы	8535,6	491,0
36.	Ҡыйғы	6003,6	333,0
37.	Краснокам	7012,4	316,0
38.	Күгәрсен	7915,9	438,0
39.	Кушнаренко	9814,7	551,0
40.	Ҡөйөргәҙе	11502,7	417,0
41.	Маҡар	8504,2	493,0
42.	Матрай	4566,2	300,0
43.	Мәләүез	8421,2	357,0
44.	Мәсетле	6572,4	358,0
45.	Мишкә	8564,0	472,0
46.	Миәкә	9631,8	544,0
47.	Нуриман	8879,6	434,0
48.	Покровка	4952,0	251,0
49.	Салауат	7486,7	407,0
50.	Стәрлебаш	6893,3	399,0
51.	Стәрлетамаҡ	11279,5	664,0
52.	Тәтешле	7523,0	401,0
53.	Туймазы	11598,0	466,0
54.	Оло Теләк	5590,1	262,0
55.	Өфө	9154,6	483,0
56.	Учалы	11131,6	539,0
57.	Федоровка	7033,1	389,0
58.	Хәйбулла	6584,0	289,0
59.	Саҡмағош	9248,4	563,0
60.	Шишмә	10653,4	563,0
61.	Шаран	9213,0	524,0
62.	Йомағужа	6215,3	316,0
63.	Яңауыл	11745,2	560,0
64.	Белорет ҡалаһы	15789,9	340,0
65.	Ишембай ҡалаһы	11905,3	250,0
66.	Стәрлетамаҡ ҡалаһы	17078,4	350,0
67.	Өфө ҡалаһы	73455,0	1553,0
68.	Черниковск ҡалаһы	33276,3	800,0
69.	Октябрьский ҡалаһы	12326,1	204,0

4. 1951 йылға Башҡорт АССР-ының республикаға буйһонған ҡалаларының һәм райондарының бюджеттарына түбәндәге отчисленииларҙы билдәләргә:

а) тауарлыҡһыҙ операцияларҙан алынасаҡ налогтан 100%

б) колхоздарҙан алынасаҡ подоходный налогтан 35%

в) яңғыҙаҡ крәҫтиән хужалыҡтарының аттарына һалынасаҡ государство налогынан 50%

г) Оборотҡан алынасаҡ налогтан, халыҡтан алынасаҡ подоходный налогтан, ауыл хужалығы налогынан, СССР-ҙың буйҙаҡ, яңғыҙ һәм аҙ семьялы граждандарына һалынасаҡ налогтан, подписка буйынса таратылған государство заемдарынан, МТС-тарҙың доходтарынан һәм урман доходтарынан түбәндәге күләмдәрҙә:

Тәртип номерҙаре	Райондарҙың һәм ҡалаларҙың исемдәре	Оборотҡан алынасаҡ налогтан	Халыҡтан алынасаҡ подоходный налогтан	Ауыл хужалығы налогынан	Яңғыҙ һәм аҙ семьялы граждандарҙан алынасаҡ налогтан	Подписка буйынса таратылған государство заемдарынан	МТС доходтарынан	Урман доходтарынан
1.	Абзан	40	100	70	100	80	40	—
2.	Әбйәлил	40	100	70	100	80	40	100
3.	Әлшәй	3	100	30	100	80	30	—
4.	Архангель	12	100	35	100	80	50	30
5.	Асҡын	39	100	40	100	80	40	80
6.	Ауырғазы	40	100	70	100	80	40	100
7.	Байҡыбаш	40	100	40	100	80	40	—
8.	Баймаҡ	4,9	80	40	80	80	40	50
9.	Баҡалы	40	100	30	100	80	30	50
10.	Балтач	40	100	70	100	80	40	—
11.	Бәләбәй	12	100	35	100	80	35	30
12.	Белоҡатай	20	100	30	100	80	40	50
13.	Белорет	0,6	15	35	10	10	100	20
14.	Бишбүләк	40	100	70	100	80	30	100
15.	Бөрө	8	100	35	100	80	30	50
16.	Благовар	44	100	40	100	80	40	—
17.	Благовещен	3,8	80	35	80	70	40	50
18.	Бүздәк	28	100	35	100	80	30	—
19.	Бәзәкә	40	100	70	100	80	40	—
20.	Борай	40	100	35	100	80	35	—
21.	Бөрйән	40	100	70	100	80	—	100
22.	Воскресен	39	100	35	100	80	40	50
23.	Ғафури	17	100	30	100	80	40	50
24.	Дәүләкән	6,7	100	30	100	80	30	50
25.	Дыуан	13	100	30	100	80	30	40
26.	Дүртөйлә	40	100	70	100	80	30	60
27.	Йәрмәкәй	40	100	35	100	80	30	—
28.	Йылайыр	5,8	80	35	80	80	100	40
29.	Зианчура	40	100	70	100	80	50	100
30.	Иглин	9	100	25	100	80	35	50
31.	Илеш	40	100	55	100	80	30	100
32.	Ҡалтасы	40	100	50	100	80	40	90
33.	Ҡандра	28	100	30	100	80	40	—
34.	Ҡариҙел	3,5	100	40	100	80	50	40
35.	Ҡырмыҫҡалы	16	100	35	100	80	40	—
36.	Ҡыйғы	34	100	40	100	80	40	—
37.	Краснокам	40	100	30	100	80	30	50
38.	Күгәрсен	39	100	35	100	80	40	50
39.	Кушнаренко	50	100	30	100	80	30	—
40.	Ҡөйөргәҙе	8	70	30	80	40	40	—
41.	Маҡар	40	100	50	100	80	40	100
42.	Матрай	40	100	70	100	80	40	—
43.	Мәләүез	5	70	30	70	70	30	—
44.	Мәсетле	40	100	70	100	80	40	—
45.	Мишкә	40	100	70	100	80	40	—
46.	Миәкә	40	100	70	100	80	40	—
47.	Нуриман	27	100	40	100	80	50	50
48.	Покровка	25	100	35	100	80	40	—
49.	Салауат	40	100	70	100	80	40	100
50.	Стәрлебаш	40	100	70	100	80	40	—
51.	Стәрлетамаҡ	0,8	20	25	10	10	35	50
52.	Тәтешле	40	100	70	100	80	40	70
53.	Туймазы	1,6	70	40	70	70	50	50
54.	Оло Теләк	39	100	40	100	80	100	—
55.	Өфө	16	100	30	100	80	30	50
56.	Учалы	9	100	40	100	80	40	50
57.	Федоровка	40	100	70	100	80	30	—
58.	Хәйбулла	34	100	50	100	80	40	100
59.	Саҡмағош	40	100	70	100	80	30	—
60.	Шишмә	24	100	25	100	80	30	60
61.	Шаран	40	100	70	100	80	40	—
62.	Йомағужа	40	100	70	100	80	40	—
63.	Яңауыл	7,5	100	30	90	80	30	—
64.	Белорет ҡалаһы	0,2	10	—	10	20	—	—
65.	Ишембай ҡалаһы	0,6	25	—	25	25	—	—
66.	Стәрлетамаҡ ҡалаһы	0,3	10	—	30	20	—	—
67.	Өфө ҡалаһы	0,7	10	—	20	10	—	100
68.	Черниковск ҡалаһы	1	10	—	25	20	—	—
69.	Октябрьский ҡалаһы	2,4	20	50	40	25	—	—

5. Башҡорт АССР-ының 1950 йылғы бюджетының үтәлеше тураһындағы отчетты бөтәһе доходтар буйынса 1.079.305 мең һум һәм расходтар буйынса 1.030.918 мең һум суммала, доходтарҙың расходтарға ҡарағанда 48.387 мең һум суммаға артыҡ булыуы менән, ә регулировать итеү фондтары, заемдарҙан һәм бюджеттең иҫке иҫәптәренән башҡа доходтар буйынса 994.455 мең һум суммала һәм расходтар буйынса 946.728 мең һум суммала раҫларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының
Председателе ***Ф. ЗАҒАФУРАНОВ***

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының
Секретары ***И. ЙӘРКӘЕВ***

6 июнь, 1951 йыл.

Башҡорт АССР-ының Хөкүмәтен — Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советын төҙөү тураһында

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы Башҡорт АССР-ының Хөкүмәтен — Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советын түбәндәге составта төҙөргә **ҡарар итә:**

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателе — **Уразбаев** Насир Рәфиҡ улы.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең Беренсе Урынбаҫары — **Кошелев** Алексей Львович.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары — **Ғатауллин** Шаих Мырҙа улы.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары — **Гашев** Андрей Дмитриевич.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең Урынбаҫары — **Изгин** Заҡир Искәндәр улы.

Башҡорт АССР-ы Государство План комиссияһының Председателе — **Сарычев** Николай Николаевич.

Башҡорт АССР-ының Государство имениеләре министры — **Касимов** Дмитрий Васильевич.

Башҡорт АССР-ының Ауыл хужалығы министры — **Нәбиуллин** Вәли Ғәби улы.

Башҡорт АССР-ының Финанс министры — **Вәлиев** Самат Фәттах улы.

Башҡорт АССР-ының Мәғариф министры — **Әлибаев** Сагит Рәхмәт улы.

Башҡорт АССР-ының Һаулыҡ һаҡлау министры — **Сиражетдинова** Майһира Ниҙаметдин ҡыҙы.

Башҡорт АССР-ының Юстиция министры — **Рәхмәтуллин** Карам Рәхмәтулла улы.

Башҡорт АССР-ының Социаль тәьминәт министры — **Исәнбаков** Ғәли Ғәлиулла улы.

Башҡорт АССР-ының Эске эштәр министры — **Фирсанов** Кондратий Филиппович.

Башҡорт АССР-ының Сауҙа министры — **Липатов** Иван Анисимович.

Башҡорт АССР-ының Коммуналь хужалыҡ министры — **Крюков** Иван Васильевич.

Башҡорт АССР-ының Урындағы промышленность министры — **Сливнев** Петр Владимирович.

Башҡорт АССР-ының Аҙыҡ промышленносе министры — **Ибраһимов** Рәхим Биғәй улы.

Башҡорт АССР-ының Еңел промышленность министры — **Ғирфанов** Әхмәт Уйылдан улы.

Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре Управлениеһының начальнигы — **Миңнеғәлиев** Ислам Миңнеғәли улы.

Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу учреждениелары эштәре Управлениеһының начальнигы — **Назиров** Мөбәрәк Йыһанша улы.

Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы эргәһендәге кинофикация Управлениеһы начальнигы — **Ғафаров** Исмағил Мөхәмәт улы.

Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы эргәһендәге юл эштәре Управлениеһы начальнигы — **Кузнецов** Иван Порфирьевич.

Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы эргәһендәге төҙөлөш материалдары промышленносе Управлениеһының начальнигы — **Ишмөхәмәтов** Ғәли Бикмөхәмәт улы.

Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы эргәһендәге урындағы ағыулыҡ промышленносе Управлениеһының начальнигы — **Резанов** Борис Аркадьевич.

Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы эргәһендәге автомобиль транспорты Управлениеһының начальнигы — **Трофимов** Григорий Петрович.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе
Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Секретары
И. ЙӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы.
6 июнь, 1951 йыл.

Комбайнерҙарҙың күтәренке йөкләмәләре

Ҡырмыҫҡалы. (Телефон аша). Ҡарлыман МТС-ында комбайндарҙы ремонтлау узловой метод буйынса алып барыла. Ремонтта эшселәр үҙ-ара ярышалар.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессияһы хөрмәтенә ремонтсылар хеҙмәт етештереүсәнлеген тағы ла күтәрҙеләр.

Комбайнерҙар быйыл урожай йыйыуҙы ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн күтәренке йөкләмәләр алдылар. «Сталинец—1» комбайнының йөртөүсе Горшенин, «Сталинец—6» комбайнында эшләүсе Мөхәмәтшин иптәштәр быйыл сезонға бәрәр мең гектар, иптәш Шайбаков «Коммунар» комбайны менән 800 гектар майҙандың урожайын 30 эш көнөндә йыйырға һүҙ бирҙеләр.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының ултырыштары

Башҡорт АССР-ының 1951 йылға бюджете һәм 1950 йылғы бюджете үтәлеше тураһында доклад буйынса фекер алышыуҙар

Депутат Н. Р. УРАЗБАЕВ телмәре

Коммунистар партияһы етәкселегендә совет халҡы, һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты уңышлы үтәп, халыҡ массаларының бөйөк политик һәм хеҙмәт күтәрелеше шарттарында коммунизмдың бөйөк төҙөлештәрен тормошҡа ашыра башланы.

Советтар Союзы һуғыштан һуңғы йылдарҙа өлгәшкән гиғант уңыштар тарихи документта — «1946 — 1950 йылдарға СССР-ҙың дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планының үтәлеш йомғаҡтары тураһында» Государство План Комитетының һәм СССР Статистика управлениеһының белдереүендә дөйөмләштерелгәндәр. 1950 йылда СССР промышленносының валовой продукцияһы 1940 йыл кимәлен биш йыллыҡ план менән ҡаралған 48 процент урынына 73 процентҡа үҫеп китте. Бөртөклө ашлыҡ культураларының валовой урожайы 1950 йылда 7 миллиард 600 миллион бот тәшкил итте.

Беҙҙең илебеҙҙә халыҡ хужалығының көслө күтәрелеүе менән бергә милли доход тайпылышһыҙ үҫә һәм хеҙмәтсәндәрҙең материаль иркен көн-күреше күтәрелә. 1950 йылда СССР-ҙың милли доходы һуғышҡа тиклемге 1940 йыл кимәлен биш йыллыҡ план менән билдәләнгән 38 процент урынына 64 процентҡа үҫеп китте.

Совет халҡының материаль көн-күреше күтәрелеү менән бергә, донъяла иң алдынғы культура — социалистик государствоның культураһы үҫә һәм сәскә ата. Сталин премиялары менән билдәләнгән күренекле хеҙмәттәр — фән, уйлап табыу, әҙәбиәт һәм искусство өлкәһендәге бик ҙур ҡаҙаныштарҙың асыҡ күрһәткесе булып тора.

Тыуған илебеҙҙең был тарихи уңыштары Ленин — Сталин партияһының ғәйәт ҙур ойоштороу эше һәм миллионлаған совет кешеләренең сталинсе биш йыллыҡты срогынан алда үтәү өсөн фиҙакәр хеҙмәттәре арҡаһында яулап алынды.

Советтар Союзының хеҙмәтсәндәре государство бюджеты һәм тыныслыҡты яҡлау тураһында СССР Верховный Советы тарафынан ҡабул ителгән Закондарҙы тәрән ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршы алдылар. Тыныс ижади хеҙмәт менән шөғөлләнеүсе совет халҡы бөтә прогрессив кешелек донъяһының башында торған хәлдә бөтә донъяла тыныслыҡты һаҡлап ҡалыу өсөн ныҡышмалы көрәш алып бара. Хеҙмәтсәндәрҙең бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталин «Правда» хәбәрсеһе менән булған беседаһында былай тип белдерҙе: «...Советтар Союзына килгәндә инде, ул киләсәктә лә һуғышты булдырмау һәм тыныслыҡты һаҡлап ҡалыу политикаһын тайпылышһыҙ үткәрәсәк».

Бөйөк юлбашсының был һүҙҙәре демократия көстәренең еңәсәгенә ышаныс тыуҙыралар һәм тыныслыҡ өсөн көрәштә бөтә прогрессив кешелек донъяһын рухландыралар.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында совет халыҡтарының туғандаш семьяһында Башҡортостан республикаһының хеҙмәтсәндәре лә экономиканы һәм культураны күтәреүҙә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Башҡортостан промышленносы һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ заданиеларын уңышлы үтәне. 1950 йылда валовой продукция эшләп сығарыу планы 103 процентҡа үтәлде һәм 1949 йылғы производство күләмен 23 процентҡа үҫеп китте. Продукцияның нефть сығарыу һәм эшкәртеү, сүйен, ҡорос һәм прокат кеүек мөһим төрҙәре һәм производствоның башҡа бик күп төрҙәре буйынса биш йыллыҡ заданиелары арттырып үтәлде.

Яңы техниканы индереү һәм үҙләштереү, төп средстволарҙы яҡшыраҡ файҙаланыу, стахановсы эш методтарын киң ҡулланыу һөҙөмтәһендә, республикабыҙҙың предприятиелары йылдан-йылға производство темптарын күтәрә һәм техник экономик күрһәткестәрҙе яҡшырта барҙылар.

Беҙҙең промышленносыбыҙ хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙә байтаҡ уңыштарға өлгәште.

Совет хөкүмәте һәм лично иптәш Сталин Башҡортостанға, беренсе нәүбәттә, колхоз һәм совхоздарҙы беренсе класлы техника менән байыҡтырыуҙа бик ҙур ярҙам күрһәттеләр. Йылдан-йылға үҫә барыусы ғәйәт ҙур бюджет ассигнованиеһы Совет Башҡортостанының хужалыҡ һәм культура төҙөлеше тураһында большевиктар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең арымай-талмай хәстәрлек күреүенең конкрет кәүҙәләнеше булып тора. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында Башҡортостан республикаһының бюджеты 97 процентҡа үҫте, йәғни ике тапҡыр самаһына артты. Был осор эсендә халыҡ хужалығының һәм культураһының бөтә тармаҡтарына Союзный бюджет, Россия Федерацияһының бюджеты һәм республикабыҙ бюджеты иҫәбенән 13 миллиард һумға яҡын аҡса, шул иҫәптән промышленносты үҫтереү һәм төҙөү эшенә 7 миллиард ярым һумдан артыҡ средство бирелде.

1946 — 1950 йылдар осоронда республикабыҙ бюджеты буйынса ғына социаль-культура сараларына 3 миллиард 173 миллион һум, шул иҫәптән мәғариф өсөн 2 миллиард 407 миллион һум средство тотолдо. Бынан тыш юғары уҡыу йорттарын, ғилми учреждениеларҙы тотоуға һәм башҡа сараларға Союзный бюджет һәм Россия Федерацияһының бюджеты буйынса һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында 8 миллион һум самаһы средство тотолдо.

1951 йылда республика территорияһында 5228 дөйөм уҡытыу мәктәптәре, 9 институт, 48 техникум һәм күп һанда культура-ағартыу учреждениелары эшләйәсәк.

Союзный хөкүмәттең 1951 йылда Өфөлә СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороу тураһындағы ҡарары Башҡортостандың культура тормошонда мөһим ваҡиға булып тора. СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы республикабыҙ халыҡ хужалығын һәм культураһын үҫтереүҙең мөһим проблемаларын хәл итергә тейешле берҙәм ғилми үҙәк буласаҡ. Академияның филиалы фән һәм техника работниктарын берләштерәсәк, милли ғилми кадрҙарҙың үҫеүенә ярҙам итәсәк, Башҡортостандың бай тәбиғи ресурстарын эшләү һәм файҙаланыуҙа ғәйәт ҙур роль уйнаясаҡ.

Депутат иптәштәр!

Һеҙҙең ҡарауығыҙға индерелгән республикабыҙҙың бюджеты республиканың артабан хужалыҡ һәм культура төҙөлеше бурыстарына тулыһынса яуап бирә һәм 1951 йылға халыҡ хужалығы планы менән ҡаралған сараларҙы финанс ресурстары менән тәьмин итә.

Халыҡ хужалығы планын һәм республика бюджетын уңышлы үтәү интерестәре бөтә хужалыҡ ойошмаларынан производство пландарын үтәү һәм арттырып үтәү, бай техниканы максималь файҙаланыу, хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан үҫтереү, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм ныҡлы экономия яһау һәм һаҡлыҡ үткәреү өсөн көрәште көсәйтеүҙе талап итә.

1950 йылда халыҡ хужалығы пландарының үтәлеш йомғаҡтары промышленность предприятиеларының һәм башҡа хужалыҡ ойошмаларының эшендә серьез етешһеҙлектәр булыуын да күрһәтә. Билдәләнгән пландарҙы валовой продукция һәм ассортимент буйынса бөтә предприятиеларҙың да үтәмәүе, айырыуса дөйөм, промышленностың бөтә тармаҡтары өсөн дә тиерлек хас етешһеҙлек булып тора.

Тотош алғанда Өлкә промышленносы 1950 йылда валовой продукция эшләп сығарыуҙың билдәләнгән планын 4 процентҡа үтәп еткермәне. Промышленностың урындағы, еңел, аҙыҡ, ағыулыҡ һәм төҙөлеш материалдары промышленносы кеүек тармаҡтары, производство пландарын үтәһәләр ҙә һәм арттырып үтәһәләр ҙә Башҡортостан Урман промышленносының сиктән тыш насар эшләүе республикабыҙҙа 1950 йыл планын тотош алғанда 100 процентҡа үтәргә мөмкинлек бирмәне.

Өлкә промышленносының 38 предприятиеһынан планды валовой продукция буйынса 9 предприятие, билдәләнгән ассортимент буйынса 25 предприятие үтәп еткермәнеләр. Министерстволарҙың һәм управлениеларҙың айырым етәкселәре хөкүмәт тарафынан ғәйепләнгән практиканы дауам иттерәләр, айырым предприятиеларҙың насар эшләүе һәм пландың өҙөлөүе алдынғы предприятиеларҙың пландарын арттырып үтәүҙәре иҫәбенән ҡапланыла.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 33 йыллығы тураһындағы докладында иптәш Булганин былай түҙеп торғоһоҙ хәлде күрһәтеп, былай тине: «Бер предприятиеларҙың насар эшләүен башҡаларҙың яҡшы эшләүе иҫәбенә ҡаплау һәм буяп ҡалдырыу практикаһының хужалыҡҡа етәкселектең совет методы менән бер нисек тә уртаҡлығы юҡ. Бындай алымдар социалистик хужалыҡ работниктарына хас түгел. Буржуаз комбинаторҙарҙың ғына шулай уйлауҙары һәм эш итеүҙәре мөмкин. Государство планы — закон ул. Һәр бер предприятие үҙенә билдәләнгән заданиены үтәргә бурыслы. Промышленность работниктары ғына түгел, бәлки беҙҙең социалистик төҙөлешебеҙҙең башҡа бөтә тармаҡтары работниктары ла ошо талаптан сығып эш итергә тейештәр».

Государство пландарын үтәүҙә ундай хата һәм Советтарса булмаған ҡарашты промышленность предприятиеларының эш практикаһынан тамырынан алып сығарып ташларға кәрәк. Министерстволар, управлениелар һәм предприятиелар етәкселәренең билдәләнгән план заданиеларын боҙорға бер нисәй ҙә нигеҙлектәре юҡ һәм улар планды бөтә сифат һәм һан күрһәткестәре буйынса үтәргә тейештәр.

Сырьё, материалдарҙы һаҡлыҡ менән тотоноу һәм экономия режимын ныҡышмалы ғәмәлгә ашырыу мәсьәләләре мөһим государство бурысы булып тора. Ләкин промышленность предприятиеларының күп кенә етәкселәре хужалыҡ иҫәбен ныҡытыуға тейешле иғтибар бирмәйҙәр, етештереүсән булмаған юғалтыуҙарға юл ҡуялар, был эшләп сығарылған продукцияның үҙенә төшөү хаҡын күтәрә һәм предприятиеларҙың рентабеллеген түбәнәйтә.

Үткән йыл республиканың хужалыҡ ойошмалары накоплениелар планын 91 процентҡа ғына үтәнеләр һәм план менән ҡаралған 8 миллион һум табышты алып еткермәнеләр. Өлкә промышленносы буйынса ғына ла етештереүсән булмаған расходтар һәм юғалтыуҙар 8 миллион һумға артыҡ тәшкил итте. Өлкә промышленносының айырым предприятиелары ағымдағы йылдың беренсе кварталында ла шундай һөҙөмтәләргә өлгәшмәнеләр.

Хужалыҡ ойошмаларының етәкселәре иптәш Сталиндың түбәндәге күрһәтмәһен хәтерҙә тоторға тейештәр. «...Үҫебеҙ тупланған средстволарға һөшәгән хәлдә, — тип әйтә иптәш Сталин, — беҙ тупланған средстволарҙы расходлау эшендә айырыуса һаран һәм тотанаҡлы булырға, һәр бер тинде аҡыллы, йәғни һәр бер моментта уны үҫтереү абсолют кәрәкле булған эшкә һалырға тейешбеҙ».

Иптәш Сталиндың был күрһәтмәләре беҙҙән халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында булған бай резервтарҙы максималь файҙаланыу, шуның менән накопление булдырыу һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү буйынса билдәләнгән пландарҙы үтәү генә түгел, бәлки арттырып үтәүҙе талап итә.

Оборудованиеларҙың бер тигеҙ нагрузка менән эшләмәүҙәре һәм күп предприятиеларҙың ритмлы эшләмәүҙәре беҙҙең предприятиеларебеҙҙә ҙур резервтар булыуы тураһында һөйләй. Мәҫәлән, Еңел промышленность министерствоһының Өфөләге аяҡ кейемдәре фабрикаһы йыш ҡына беренсе декадала айлыҡ пландың 24—28 проценте, ә өсөнсө декадала 40—50 проценте күләмендә продукция биреп килә. Стәрлетамаҡтағы аяҡ кейемдәре фабрикаһы 1950 йыл августының беренсе декадаһында айлыҡ продукцияның 22 проценте, ә өсөнсө декадаһында — 50 проценте күләмендә продукция эшләп сығарҙы.

Тотош алғанда еңел промышленность предприятиелары продукцияны беренсе декадала айлыҡ пландың 20—25 проценте, ә өсөнсө декадала 40—45 проценте күләмендә эшләп сығаралар. Тимәк, министр иптәш Ғирфанов етәкселек иткән Еңел промышленность министерствоһының предприятиелары ай башында ныҡышмалы эшләмәйҙәр, ә һуңғы декадаларҙа уларҙа штурмовщина башлана.

Үткән йыл еңел промышленность предприятиелары тотош алғанда 1 миллион 240 мең һум етештереүсән булмаған расходҡа юл ҡуйҙылар, шул иҫәптән 1 миллион һумдан артыҡ штраф, пеня түләнеләр. Еңел промышленность предприятиеларының үткән йыл планын һәм ағымдағы йылдың беренсе квартал планын арттырып үтәүҙәренә ҡарамаҫтан, уларҙың эшендә серьез етешһеҙлектәр булыуын әйтергә кәрәк. Күп предприятиелар ныҡышмалы эшләмәйҙәр, ә Еңел промышленность министры иптәш Ғирфанов үҙен уртаса һандар менән тынысландыра һәм эшләп сығарыла торған продукцияның сифатын күтәреү һәм планды еңел промышленность предприятиеларының резервтарын максималь файҙаланыу иҫәбенә үтәү буйынса аҙ инициатива күрһәтә.

Республиканың Аҙыҡ промышленносы министерствоһы эшендә ҙур етешһеҙлектәр бар. Туранан-тура әйтергә кәрәк, Аҙыҡ промышленносы министры иптәш Ибраһимов үҙ ведомствоһына ҡараған предприятиеларға бик өҫтән генә етәкселек итә. Үткән йыл Өфө кондитер фабрикаһы һәм Өфө һыра заводы накоплениелар планының яртыһын да үтәмәнеләр. 1950 йылда Бәрә йәшелсә киптереү заводы картофты, йәшелсәләрҙе, ағыулыҡты бик күп артыҡ расходлауға юл ҡуйҙы. Һөҙөмтәлә завод 326 мең һум пландан тыш зарар күрҙе һәм йыл аҙағына бөтөнләй оборот средствоһыҙ ҡалды.

Консерва заводы 1950 йылды пландан тыш зарар күреү менән тамамланы, ә Красноусол умартасылыҡ совхозының хужалығы тарҡаулыҡ хәленә килтерелгән.

Партия һәм хөкүмәтебеҙ киң ҡулланыу тауарҙарын эшләп сығарыуҙы арттырыуға ҙур иғтибар бирә. Был эштә район һәм кооператив промышленносының роле ғәйәт ҙур.

Был промышленностың эшендә баһаны уның эшләп сығарыла торған тауарҙың һаны һәм сифаты буйынса киң ҡулланыу тауарҙарына халыҡтың үҫә барған талабын ни тиклем ҡәнәғәтләндерә алыуынан сығып бирергә тейешбеҙ. Район һәм кооператив промышленносының был төп бурысты әле үтәп еткермәүен әйтергә кәрәк. Район һәм кооператив промышленносы предприятиеларының ҡайһы бер етәкселәре планды билдәләнгән ассортимент буйынса үтәүҙе үҙҙәре өсөн мәжбүри тип иҫәпләмәй, юғары хаҡлы изделиеларҙы беренсе нәүбәттә эшләп сығарыу практикаһын үткәрә башланылар. Урындағы промышленность министерствоһына ҡараған район промышленносының, планды тотош алғанда күпләп һатыу хаҡтарында үтәгән хәлдә, ассортимент буйынса планды изделиеларҙан 86 төрөнән 20 төрө буйынса ғына, Башпромсовет артелдәренең 110 изделиенән 37 изделие буйынса ғына, Лесхимпромсоюз артелдәренең 50 төрҙән 20 төрө буйынса ғына һәм Башкоопинсоюз артелдәренең 77 изделиенән 30 изделие буйынса ғына үтәүҙәрен башҡаса аңлатыу мөмкин түгел.

Обоз изделиеларын эшләп сығарыу айырыуса насар тора. Урындағы һәм кооператив промышленносы тарафынан арбалар яһау планы 24 процентҡа ғына үтәлгән, был буйынса 2884 арба, йәки бер районға 45 арба яһалған.

Отчет мәғлүмәттәре буйынса мебель әҙерләү планы тотош алғанда государство һәм кооператив промышленносы тарафынан 130 процентҡа үтәлгән. Ләкин дефицит изделиеларҙан ултырғыстар әҙерләү 65 процентҡа, табуреткалар 69 процентҡа һәм өҫтәлдәр — 72 процентҡа ғына үтәлгән.

Эшләп сығарылған продукцияның сифаты күп ваҡытта халыҡтың үҫә барған талабына бөтөнләй яуап бирмәй. Урындағы район һәм кооператив промышленносының етәкселәре, халыҡтың мебелдәргә талабы ҙур булыуҙан файҙаланып эшләп сығарыла торған продукцияның сифатын күтәреү тураһында ҡайғыртмайҙар, ә сауҙа итеүсе ойошмалар бөтөнләй инициатива күрһәтмәйҙәр һәм киң ҡулланыу тауарҙары етештереүсе предприятиеларға үҙҙәренең талаптарын ҡуймайҙар.

Предприятиеларҙың рентабеллеген күтәреү өсөн көрәш сиктән тыш насар алып барыла. Үткән йыл урындағы район промышленносының 67 райпромкомбинатынан 40 комбинат йылды зарар менән тамамланы.

Урындағы район промышленносы эшенең ҡәнәғәтләнмәҫлек булыуы Урындағы промышленность министры иптәш Сливкевте борсорға тейеш ине, ләкин ул был ҙур етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн тулы саралар күрмәне. Урындағы промышленность министры иптәш Сливкев район промышленносының эшен яҡшыртыу, атап әйткәндә обоз изделиеларын эшләп сығарыу мәсьәләләре буйынса Башҡортостан Министрҙар Советы ҡарарын үтәмәне.

Урындағы промышленность министерствоһының етәкселеге государство планын үтәүгә ҡарашын үҙгәртергә һәм район промышленносының эшен тамырынан алып үҙгәртеүҙе тәьмин итергә тейеш.

Шуның менән бергә, айырым район Советы исполкомдарының, уларҙың штатында председателдең урындағы промышленность буйынса махсус урынбаҫары булыуға ҡарамаҫтан, асылда район промышленносының эше менән шөғөлләнмәйҙәр һәм ҡыҙыҡһынмайҙар. Асҡын, Учалы, Ғафури, Күйөргәҙе, Бәрә, Федоровка, Нуриман, Воскресен һәм башҡа райондарҙың исполкомдары үҙ райпромкомбинаттарының рентабелле эшләмәүенә түҙеп торалар. Асҡын райпромкомбинаты 1947 йылдан алып зарар менән эшләй. Һәм был зарарҙарҙың һаны йылдан-йыл үҫә.

Мәҫәлән, Учалы райпищепромкомбинатының эшен нормаль тип иҫәпләргә мөмкинме, ул үткән йыл күпләп һатыу хаҡтарында 17 мең һумлыҡ продукция эшләп сығарҙы, ә эш хаҡын ғына 30 мең һум түләне һәм йылды 58 мең һум зарар менән тамамланы.

Район һәм ҡала Советтарының исполкомдары район һәм кооператив промышленносы эшенә күберәк иғтибар бирергә һәм билдәләнгән планды үтәүҙе бер һүҙһеҙ тәьмин итергә тейештәр. Бының өсөн бөтәһенән дә элек райисполком председателдәренең промышленность буйынса урынбаҫарҙарының эшен активлаштырырға, уларҙың яуаплылығын күтәрергә һәм уларҙы дөрөҫ файҙаланмауҙы бөтөрергә кәрәк.

Министрҙар, управление начальниктары промышленность предприятиеларының етәкселәре, үткән 5 ай эсендәге эш йомғаҡтарынан сығып, үҙҙәренә ҡараған предприятиеларҙың производство хужалыҡ эшмәкәрлегендә етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн бөтә кәрәкле сараларҙы күрергә, билдәләнгән планды һәр бер предприятиеның үтәүенә һәм арттырып үтәүенә өлгәшергә тейештәр. Төп бурыс предприятиеға етәкселек кимәлен күтәреүҙән, артта ҡалыусы предприятиеларға күберәк иғтибар биреүҙән тора.

Хеҙмәтсәндәрҙең материаль яҡшы көн күрешенең тайпылышһыҙ үҫеүе сауҙа ойошмаларына ҙур талаптар ҡуя. Ләкин был талаптарҙы сауҙа ойошмалары насар иҫкә алалар, һөҙөмтәлә уларҙың эшендә серьез етешһеҙлектәр бар. Сауҙа ойошмаларының күп кенә етәкселәре ошо көнгә тиклем бүлеү принциптарынан баш тартмайҙар һәм ассортиментты киңәйтеү һәм тауар әйләнеше планын уңышлы үтәү өсөн үҙәкләштерелмәгән сығанаҡтарҙы әйләнешкә индереү буйынса бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланмайҙар. Сауҙа ойошмалары бүленгән тауар фондтарын промышленность базаларынан систематик рәүештә алып бөтөрмәй киләләр. Һәм йыш ҡына тауарҙарҙы халыҡтың ихтыяжын иҫәпкә алмайынса килтерәләр. Шуның менән бергә, базаларҙа булыуға ҡарамаҫтан көндәлек кәрәкле әйберҙәрҙе — кәрәсин, тоҙ, шырпы, һабын һәм башҡаларҙы сауҙа точкаларына килтермәйҙәр. Сауҙа культураһын күтәреү өсөн ныҡышмалы көрәш алып барылмай, антисанитарияға һәм һатып алыусыларҙы насар хеҙмәтләндереүгә юл ҡуйыла.

Был һәм башҡа бик күп етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, торгтарҙың хужалыҡ-финанс эшмәкәрлеген ҡырҡа яҡшыртыу сауҙа ойошмаларының һәм уларҙың етәкселәренең кисектергеһеҙ бурысы булып тора.

Халыҡтан налогтарҙың һәм йыйымдарҙың үҙ ваҡытында инеүен ойоштороу республика бюджетын уңышлы үтәүҙең мөһим шарттарынан береһе булып тора. Финанс министерствоһы һәм уның урындағы органдары үткән йыл үҙҙәренең төп бурыстарын — халыҡтан һәм колхозсыларҙан средстволарҙы мобилизациялау планын үтәп еткермәнеләр.

Ағымдағы йылда ла налогтарҙы һәм башҡа түләүҙәрҙе йыйыу сиктән тыш насар бара. Күп кенә финанс органдарының халыҡ араһында ойоштороу һәм массовый аңлатыу эштәренең түбән кимәлдә алып барылыуҙары бюджет доходтарын үтәү буйынса республиканың артта ҡалыуында төп сәбәп булып тора. Налог работниктарының эшенә контроль насар ҡуйылған, уларҙың күбеһе средство йыйыу буйынса үҙҙәренең туранан-тура бурыстарын үтәмәйҙәр. Финанс министерствоһы һәм уның етәкселеге түбәнге финанс органдарына талапсанлыҡты күтәрергә һәм бюджет доходтарын үтәү буйынса серьез етешһеҙлектәрҙе бөтөрергә тейештәр.

Башҡортостан бюджетының доход өлөшөн 0,5 процентҡа, расход өлөшөн 1,2 процентҡа үтәп еткермәгәне өсөн СССР Верховный Советының икенсе сессияһында ғәҙел тәнҡит ителде. Финанс органдарының етәкселәре, хеҙмәтсәндәр депутаттарының район һәм ҡала Советы исполкомдары был тәнҡиттән тейешле һығымта яһарға һәм ағымдағы йыл бюджетын уңышлы үтәүҙе тәьмин итергә бурыслылар.

Ағымдағы йыл бюджеты буйынса социаль-культура сараларына 794 миллион һум аҡса расходлау ҡаралған. Был республика бюджетының бөтә расходтарының 82 процентын тәшкил итә. Был ғәйәт ҙур ассигнованиелар мәктәптәрҙе, больницаларҙы, балалар йорттарын һәм баҡсаларын, балалар яслеларын һәм башҡа учреждениеларын тотоуға йүнәлтелә.

Халыҡ мәғарифенә 594 миллион һум һәм һаулыҡ һаҡлауға 191 миллион һум аҡса тотоласаҡ. Был ассигнованиелар уларҙы дөрөҫ һәм эффектлы файҙаланыу өсөн Мәғариф министерствоһына һәм Һаулыҡ һаҡлау министерствоһына серьез яуаплылыҡ йөкмәтә. Шул уҡ ваҡытта был министерстволарҙың эшендә серьез кәмселектәр бар әле.

Халыҡ мәғарифе органдары мәктәп йәшендәге балаларҙы уҡыуға тулыһынса йәлеп итеү өсөн етерлек көрәш алып бармайҙар, балаларҙың уҡыуҙы ташлауына һәм бер класта ике йыл ҡалыуҙарына юл ҡуялар. Үткән йылда меңәрләгән баланың класта икенсе йылға ҡалыуын нормаль тип иҫәпләргә мөмкинме ни. Был цифрҙар республиканың күп мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эшенең ҡәнәғәтләнерлек ҡуйылмауы тураһында һөйләйҙәр.

Совет государствоһы етем балалар өсөн балалар йорттары селтәрен киң йәйелдерҙе. Халыҡ мәғарифе органдарының бурысы уларҙы Советтар Союзының большевиктар партияһына һәм Совет хөкүмәтенә бирелгән граждандары итеп тәрбиәләүҙән тора.

Хөкүмәтебеҙ балаларҙы ҡарауға ғәйәт ҙур средстволар бүлә. Был средстволарҙы дөрөҫ һәм эффектлы файҙаланыуҙың балалар йортоноң эшен яҡшыртыу өсөн бик ҙур әһәмиәте бар. Балалар йорттарының ҡарамағында ҙур материаль киммәттәр һәм аҡса средстволары бар, бөтәһенән дә элек балалар йорттары өсөн етәксе работниктарҙы дөрөҫ һайлап алыу, уларҙың һаҡлығын тәьмин итәсәк.

Мәғариф министры иптәш Әлибаев, уҡытыу-тәрбиә эше һәм уҡытыусылар кадрҙары менән билдәле күләмдә эш алып барһа ла, халыҡ мәғарифе органдарының хужалыҡ һәм финанс мәсьәләләренә тейешле иғтибар бирмәй, дөрөҫөрәге уны баһаламай. Иптәш Әлибаев әле булһа смета дисциплинаһын боҙоу, хужаһыҙлыҡ фактарына килешеп ҡарай һәм министерство эштәрендә ҙур етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү сараһын күрмәй.

Халыҡ мәғарифе органдары һәм район, ҡала Советы исполкомдары мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына өлгәлә әҙерләүҙе тәьмин итергә, уҡытыу-тәрбиә эшендәге ҙур етешһеҙлектәрҙе бөтөрергә һәм балалар учреждениеларының һәм мәктәптәрҙең хужалығында тейешле тәртип булдырырға бурыслылар.

Финанс органдары, район һәм ҡала Советтарының исполкомдары социаль-культура учреждениеларын бюджет менән ҡаралған тулы күләмдә ваҡытында һәм нормаль финанслауҙы тәьмин итергә тейештәр.

Бюджет дисциплинаһын боҙоуҙың, бюджет средстволарын законһыҙ расходлауҙың, раҫланылған сметанан артыҡ тотоноуға юл ҡуйыуҙың һәм государство средстволарын туҙҙырыуҙың бәләкәй генә факты ла государство интерестәренә ғәйәт ҙур зыян килтерә.

Республика бюджетын үтәүҙә учреждениеларҙың меңәрләгән етәкселәре ҡатнаша һәм уларҙың һәр береһенә йөҙәр меңләгән государство средствоһы ышанып тапшырылған. Бөтә етәкселәрҙең был средстволарҙы максималь һаҡлыҡ менән расходлауҙарына һәм уларҙы рациональ һәм эффектлы файҙаланыуҙы тәьмин итеүҙәренә өлгәшергә кәрәк. Быны беҙҙән коммунизмдың бөйөк төҙөлештәрен финансировать итеүҙең грандиоз программаһын үтәү буйынса ил алдында торған бурыстар талап итә.

Депутат иптәштәр!

Ҡайһы бер депутаттар үҙҙәренең сығыштарында Верховный Советҡа һәм Министрҙар Советына төрлө йәки был саралар өсөн ассигнованиелар өҫтәүҙе һорап мөрәжәғәт иттеләр. Был һорауҙарҙың барыһын да Министрҙар Советы ентекләп өйрәнәсәк һәм ҡараясаҡ. Шуның менән бергә, мин айырым депутаттарҙың ебәргән средстволарҙы үҙләштереү һәм үҙҙәренең мөмкинлектәрен иҫәпкә алмайынса средстволар һорауҙарын билдәләп китергә теләйем.

Депутат Копустин балалар больницаһы һәм 3 мәктәп бинаһы төҙөү өсөн средство бүлеүҙе һораны. Өфөлә эш аҡсала тормай. 1950 йылда ғына Өфөлә коммуналь торлаҡ төҙөлөшө буйынса ғына ете миллион ярым һум самаһы аҡса файҙаланылмай тороп ҡалды. Ағымдағы йылдың 5 айы эсендә был маҡсаттар өсөн бүленгән средстволар 18 процентҡа ғына үҙләштерелгән. Әгәр ҙә аҡсалар киләсәктә лә ошондай темптар менән үҙләштерелһә, ул ваҡытта бүленгән средстволарҙың йыл буйына тотош алғанда 60 проценты ғына файҙаланыласаҡ.

Өфөлә эш аҡса средстволарын ассигновать итеүҙә түгел, ә план менән ҡаралған средстволарҙы үҙләштереүҙә икәнлеген тағы ла бер тапҡыр иҫкәртәһе килә. Был Өфөләге төҙөлөш ойошмаларының эшенә бәйләнгән. Тимәк, төҙөлөш ойошмаларының эшен тамырынан алып яҡшыртыу Өфө ҡалаһы өсөн хәл иткес шарт булып тора.

Депутат Данилко 1952 йылға халыҡ планында Стәрлетамаҡ ҡалаһында кинотеатр бинаһын төҙөүгә күпҙә тотоуҙы һораны. Беҙ был мәсьәләне ҡуйыуҙы ваҡытынан алда тип иҫәпләйбеҙ. Сөнки 1950 йылда Стәрлетамаҡта булған кинотеатр биналары 50 процентҡа ғына, ә быйылғы 5 ай эсендә — 40 процентҡа ғына файҙаланылды.

Ҡалаларҙы төҙөкләндереү тураһында һөйләгәндә был эштә ҡалаларҙың халыҡтарының ҡатнашыуын онотоға ярамай. Төҙөкләндереү эшенә государство ебәргән ҙур средстволар был эштә ҡала халыҡтары үҙҙәре актив ҡатнашҡанда ғына эффектлы файҙаланасаҡ.

Шулай булһа ла, күп кенә ҡалаларҙа бөтә эште государство средстволары иҫәбенә башҡарырға теләйҙәр, ә ҡала халҡы төҙөкләндереү эшенә йәлеп ителмәй. Мәҫәлән, 1950 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында 14 кешегә бер генә эш көнө тура килде. Шуға күрә лә 1950 йылда был ҡалала бер генә ағас та ултыртылмаған һәм юлдарҙы, урамдарҙы, тротуарҙарҙы ремонтлау буйынса бер нәмә лә эшләнмәне, һөҙөмтәлә хатта үҙәк урамдарҙа һәм баҙарҙарҙа ла үтә алмаҫлыҡ бысраҡ булыуы ғәжәп түгел. Белорет һәм башҡа ҡайһы бер ҡалаларҙа ла шундай уҡ хәл.

Бына был фонда Башҡорт АССР-ы Коммуналь хужалыҡ министерствоһы эшенең насар булыуы ла күренә. Коммуналь хужалыҡ министры иптәш Брюсов ошо көнгә тиклем республика коммуналь хужалығының төп мәсьәләләре менән шөғөлләнә алмай. Ул башлыса ваҡ мәсьәләләр менән шөғөлләнә һәм уларҙан һис тә ҡотола алмай.

Ҡала Советтары исполкомдарының һәм Коммуналь хужалыҡ министерствоһының бурысы ҡалаларҙы төҙөкләндереү эшенә халыҡты максималь йәлеп итеүҙән тора. Район үҙәгендә һәм ҡалала йәшәгән һәр бер кешенең төҙөкләндереү эшендә йылына кәмендә ике көн эшләүенә өлгәшергә кәрәк, ул ваҡытта средстволар һорау бик күпкә кәмер.

Депутат иптәштәр!

Депутаттар министерстволарҙың, управлениеларҙың һәм Министрҙар Советы эшен ғәҙел тәнҡитләнеләр. Министерстволарҙың һәм управлениеларҙың эшендә серьез етешһеҙлектәрҙең булыуы республика Министрҙар Советының үҙенең практик эшендә эштең айырым участкаларын иғтибарҙан төшөрөүен һәм министерстволарҙың, управлениеларҙың һәм башҡа хужалыҡ ойошмаларының етәкселәренән аҙ талап итеүен күрһәтә.

Министрҙар Советы аппаратының Министрҙар Советы ҡарарҙарының һәм күрһәтмәләренең үтәлешенә әле булһа ҡәнәғәтләнерлек һәм ваҡытында контроль яһамауын Министрҙар Советы эшенең төп кәмселеге итеп иҫәпләргә кәрәк. Ошо айҙағы Министрҙар Советының министерстволарҙың һәм управлениеларҙың эштәрен анализ яһап, етешһеҙлектәрҙе ваҡытында асыуға һәм уларҙы етәксе органдарға күрһәтеүгә тейеш булған Госплан кеүек мөһим органының үҙ функцияһын әле булһа ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәүен билдәләп үтергә кәрәк. Иптәш Сарычев етәкселек иткән Госплан аппараты тормоштан айырылған, предприятиеларҙа, райондарҙа аҙ була һәм перспектив планлаштырыу менән насар шөғөлләнә.

Шуны әйтеү ҙә етә, Госплан республика Автоуправлениеһы өсөн йөк әйләнешенең йыллыҡ планын билдәләү менән генә сикләнде һәм был управлениеның автопаркы халыҡ хужалығының айырым тармаҡтарын хеҙмәтләндерергә тейешлеге тураһындағы мәсьәлә менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынманы. Шунлыҡтан автоуправление начальнигы иптәш Трофимов үҙ теләгәнсә кем етте шуның менән договор төҙөгән һәм уларҙың йөгөн ташыған, шул уҡ ваҡытта бюджет учреждениелары ойошмаларға һәм кешеләргә йөктәрҙе һәм ағыулыҡты ташығаны өсөн [illegible] ҡыйбат түләгәндәр.

Республика халыҡ хужалығы планын уңышлы үтәү интерестәре Госпландың, министерстволарҙың, управлениеларҙың һәм Министрҙар Советының был етешһеҙлектәрҙе яҡын ваҡыт эсендә бөтөрөүҙәрен һәм 1951 йылда республиканың халыҡ хужалығы планын һәм бюджетын уңышлы үтәүҙе тәьмин итеүҙәрен талап итә.

Депутат иптәштәр!

Башҡорт АССР-ының 1951 йылға государство бюджетын үтәү республикабыҙҙан бөтә көстө мобилизовать итеүҙе һәм ныҡышмалы эшләүҙе талап итә.

Шик юҡ, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре СССР-ҙың бөтә халыҡтары менән бергә коммунистар партияһы, Совет хөкүмәте етәкселегендә һәм бөйөк Сталиндың гениаль юлбашсылығында 1951 йылда социалистик экономиканы, культураны үҫтереүҙә һәм республика халҡының материаль етеш көн-күрешен күтәреүҙә яңы уңыштарға өлгәшерҙәр.

Йәшәһен беҙҙең данлы коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте!

Беҙҙең юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ бөйөк Сталин оҙаҡ йылдар йәшәһен һәм сәләмәт булһын!

Башҡорт АССР-ы Конституцияһының (Төп Законының) 108-се статьяһын үҙгәртеү тураһында
ЗАКОН

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы ҡарар итә:

1. «Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәр депутаттарының ауыл һәм поселка Советтарына һайлауҙар буйынса һайлау нормалары тураһында» Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының 1950 йыл 4 октябрҙәге Указын раҫларға.

2. Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 108-се статьяһына үҙгәртеү индерергә, был статьяның һуңғы абзацы алдындағы өлөшөн түбәндәгесә яҙырға: «Ауыл һәм поселка Советтарына — 100 кешенән бер депутат, 1000 кешегә тиклем халыҡ йәшәгән ауылдарҙа һәм поселкаларҙа 9 депутат һайлана, ә халҡы 3500-ҙән артығыраҡ булһа — 35 депутаттан да артыҡ һайланмай».

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.
Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Секретары И. ЙӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы,
6 июнь, 1951 йыл.

Башҡорт АССР-ы Конституцияһының (Төп Законының) 22-се статьяһын үҙгәртеү тураһында
ЗАКОН

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы ҡарар итә:

1. «Башҡорт АССР-ының Верховный Советына һайлауҙар ваҡытында вәкиллек нормалары тураһында» Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының 1950 йыл 10 декабрҙәге Указын раҫларға.

2. Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 22-се статьяһына үҙгәртеү индерергә, уны түбәндәгесә яҙырға:

«Башҡорт АССР-ының Верховный Советы 15 мең кешенән бер депутат нормаһы менән һайлау округтары буйынса Башҡорт АССР-ы граждандары тарафынан 4 йылға һайлана».

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.
Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Секретары И. ЙӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы,
6 июнь, 1951 йыл.

Башҡорт АССР-ының Урман промышленносе Министерствоһын бөтөрөү тураһында
ЗАКОН

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы ҡарар итә:

1. «Башҡорт АССР-ының Урман промышленносе министерствоһын бөтөрөү тураһында» Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының 1951 йыл 5 апрелдәге Указын раҫларға.

2. Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 44-се статьяһына үҙгәртеү индерергә — «Урман промышленносе» тигән һүҙҙәрҙе алып ташларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.
Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Секретары И. ЙӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы,
6 июнь, 1951 йыл.

Башҡорт АССР-ы Верховный Судының Председателен һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Судының членен һайлау тураһында

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы ҡарар итә:

Башҡорт АССР-ы Верховный Судының Председателе итеп иптәш Сайпушев Александр Сайпушевичты;

Башҡорт АССР-ы Верховный Судының члены итеп — иптәш Хөбиров Солтан Йәмил улын һайларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе Ф. ЗАҒАФУРАНОВ.
Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Секретары И. ЙӘРКӘЕВ.

Өфө ҡалаһы,
6 июнь, 1951 йыл.

Комбайндар социалистик һаҡлыҡҡа алынды

Димитров МТС-ы мастерскойында комбайндарҙы срогынан алда һәм яҡшы сифатлы итеп ремонтлау өсөн ярыш бара. Комбайнерҙар, ремонт темпын көсәйтеү менән бергә, быйыл урожай йыйнауҙа сезон нормаһын байтаҡ арттырып үтәргә социалистик йөкләмә алалар.

МТС-тың механизаторҙары араһында социалистик ярышты йәйелдереүҙә алдынғы комбайнер иптәш Яков Иванов инициатор булды. Ул ремонтсыларҙың кәңәшмәһендә, комбайндарҙы сифатлы итеп ремонтларға, урожай йыйнау осоронда сәғәт графигы менән эшләргә, комбайнды социалистик һаҡлыҡҡа алырға, һәр уны көндә экономияланған яғыулыҡ иҫәбенә бер көн эшләргә, 30 эш көнөндә «Сталинец-6» комбайны менән 700 гектар майҙандың урожайын йыйнарға йөкләмә алды.

Иптәш Иванов урожай йыйнағанда ҡамыл төбөн 10—15 сантиметр бейеклектә ҡалдырыуҙа һәм комбайнды туҡтатмайынса игенен бушатыуҙы күҙҙә тота. Уның комбайны яҡшы сифатлы ремонтланды һәм орлоҡ тотҡос менән йыһазландырылды.

Иптәш Ивановтың саҡырыуына ҡушылып, А. Черепанов, Ф. Бухарев иптәштәр «Сталинец—1» комбайны менән 700-шәр гектар майҙандың урожайын яҡшы сифатлы итеп йыйнарға һүҙ бирҙеләр. Улар үҙҙәренә беркетелгән комбайндарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алдылар.

Х. Әбүзәров,
МТС директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары.

КОЛХОЗ БЕСӘН САБЫУҒА ӘҘЕР

Беҙҙең Жданов исемендәге колхоз (Шишмә районы) общественный малдарға ҡышлыҡ аҙыҡ әҙерләүҙең нормаларын билдәләне. Шуға нигеҙҙә беҙ быйыл колхоздың тәбиғи болонлоҡтарында һәм үләнсәсеп үҫтерелгән баҫыуҙарында, бөтәһе 405 гектар майҙандан, 1000 центнер бесән һәм 600 тонна силос әҙерләргә тейешбеҙ.

Колхозыбыҙ бесән сабып йыйнауға яҡшы әҙерләнде. 8 бесән сапҡыс машина, 150 ҡул салғыһы, 50 һәнәк, 50 ҡул тырмаһы һәм башҡалар булдырылды. Дөйөм колхоз һәм бригадалар буйынса эш пландары төҙөлдө. Бесән сабып йыйнау осорондағы эш тәртиптәре колхозсыларға аңлатылды.

Колхоз быйыл мал аҙыҡтары йыйнау планын урожай йыйнауҙы башлауға тиклем тамамлауҙы планлаштыра.

А. Ғайтҡолов.

Республика хеҙмәтсәндәре СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы ойоштороллоуын шатлыҡ һәм ғорурлыҡ менән билдәләйҙәр

СССР Союзы Министрҙар Советы ҡарары нигеҙендә Өфө ҡалаһында СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы ойошторолдо.

Республика хеҙмәтсәндәре был ваҡиғаны Совет Башҡортостанының экономикаһы һәм культураһы артабан сәскә атыуы тураһында сталинсә бөйөк хәстәрлек, ленинсә-сталинсә милли политиканың тантанаһы, тип ҡаршылайлар.

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының бөгөнгө номерында республиканың промышленность, ауыл хужалығы һәм культура работниктарының сығыштарын бирәбеҙ.

Бөйөк хәстәрлек

Һуңғы көндәрҙә радио һәм газеталарыбыҙ Башҡортостандың бөтә хеҙмәтсәндәре өсөн шатлыҡлы хәбәр алып килделәр. Ул — республикабыҙҙың башҡалаһы Өфөлә СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороу тураһындағы ССР Союзы Министрҙар Советының ҡарары.

Хөкүмәтебеҙҙең был ҡарары республикабыҙҙың культура тормошонда тиңдәше булмаған ҙур ваҡиға булып тора. Беҙҙең илебеҙҙә фәнде алға ебәреү өсөн киң юл асылған. Уны үҫтереүҙә фән деятелдәре генә түгел, ә киң ҡатлам хеҙмәтсәндәрҙә ҡатнашалар. Шуға күрә фән практика менән тығыҙ бәйләнештә көндән-көн алға бара.

Фән һәм техника өлкәһендә өлгәшелгән ҡаҙаныштар промышленноста һәм ауыл хужалығында бик тиҙ ҡулланыу таба, хеҙмәт етештереүсәнлеген әҙләкһеҙ күтәреүгә килтерә һәм физик хеҙмәт менән аҡыл хеҙмәте араһындағы айырманы тулыһынса бөтөрөүгә алып бара. Мәҫәлән, элек батша Россияһы ваҡытында ер аҫты ремонтсыларының хеҙмәте нефть промышленносында иң ауыр эштәрҙән һаналған. Һәм был өлкәлә кәрәкле техника булмағанлыҡтан бик күп һанда эшселәр һәләк булғандар һәм ғәриләнеп ҡалғандар. Хәҙер ер аҫты ремонтсылары юғары техника менән ҡоралландырылды һәм эшсенең ғүмере өсөн бер төрлө лә ҡурҡыныс ҡалманы.

Беҙ, нефтселәр СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы асылыуын ысын күңелдән ҡотлайбыҙ, уның киләсәгенә ҙур өмөт менән ҡарайбыҙ.

Хөкүмәтебеҙҙең, партиябыҙҙың һәм һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең беҙҙең башҡорт халҡына ҡарата булған был ҙур хәстәрлегенә яуап итеп тағы ла күберәк эшләйһе, ижад итәһе, яңынан-яңы хеҙмәт подвигтары күрһәтәһе килә.

А. Вахитов,
Социалистик Хеҙмәт Геройы.

Башҡорт культураһының ғорурлығы

Өфөлә СССР фәндәр Академияһының филиалы асылыу башҡорт культураһының үҫешендә баһалап бөтә алмаҫлыҡ ҙур ваҡиға. Бөйөк Сталин инициативаһы менән барлыҡҡа килгән был ҙур ваҡиға башҡорт культураһы тарихында яңы осорҙо башлап ебәрә.

Был хәл фәндең башҡа тармаҡтары менән бергә тел-әҙәбиәт өлкәһендә эшләүселәрҙе шатландыра. Октябрь социалистик революцияһының ҡаҙанышы булып майҙанға килгән социалистик йөкмәткеле, милли формалағы башҡорт әҙәбиәте үҙенең артабан үҫешендә яңы бейеклеккә күтәрелә. Әҙәби тәнҡит быға тиклем беҙҙә артта ҡалған участка булып килде, ғилми-тикшеренеү әле бөгөнгө талаптар бейеклегенә күтәрелеп етә алманы. Бөгөндән башлап был өлкәлә киң юл асыла. Фән эшлеклеләренә ҡыйыу хеҙмәткә тағы ла ҙур мөмкинлек тыуа.

Бындай әрә аҙым менән атлау тик коммунизм төҙөүсе илдә генә булырға мөмкин. Бынан 25 йылдар элек Наркомпростың бәләкәй бүлмәһенә генә тупланған өс-дүрт ғилми работниктән генә торған «Ғилми мәркәз»ҙән бер нисә тикшеренеү институттары майҙанға килде. Ә бөгөн шул үҫештәрҙең юғары күренеше — СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы! Шундай ҡыҫҡа осорҙа ирешелгән ҙур үҫешкә нисек ҡыуанмаҫҡа, нисек ғорурланмаҫҡа!

Сәғит Агиш.

Нефть сығарыу тағы ла алға китер

Башҡортостан ере — бик күп төрлө ер аҫты ҡаҙылмаларына бай. Һуңғы йылдарҙа беҙҙә бигерәк тә нефть промышленносы ҡыҙыу темптар менән үҫә, һөҙөмтәлә Башҡортостан нефть республикаһына әүерелде һәм республикала нефть промышленносы артабан тағы ла киңерәк үҫергә тейеш. Ер аҫтында әлегә тиклем табылмаған нефть запасы ҙур. Ул табылған урындарҙа ла пластағы бөтә нефтте һыуырып алыу юлдары фәнни нигеҙҙә тамам эшләнеп бөтмәгән әле. Был өлкәлә Ишембай нефть ятҡылыҡтарында ҙур эштәр башҡарылыу талап ителә. Әлегә тиклем беҙҙә нефть пластарын икенсе һәм өсөнсө тапҡыр эшкәртеү проблемаһы хәл ителмәгән. Был өлкәлә фән кешеләренең ярҙамы кәрәк.

Өфөлә СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы ойошторолоу ошо проблеманы хәл итеүҙә ҙур ярҙам күрһәтер тип ышанабыҙ. Шулай уҡ беҙ, Ишембай нефть тресының инженер-техник работниктары, уларға кәрәк булған ярҙамды күрһәтергә һәр ваҡыт әҙербеҙ. Әйҙә, республикала алдынғы совет фәне гөрләп сәскә атһын!

П. Давыдов,
«Ишембайнефть» тресының инженеры.

Совет фәненең артабан сәскә атыуы өсөн

Башҡорт халҡының бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем тормошо ҡараңғы һәм ауыр ине. Ул ваҡытта ярлы балаларына юғары уҡыу йорттарына инеп белем алыу түгел, үҙ фекерҙәрен асыҡ итеп әйтергә лә рөхсәт ителмәй ине.

Совет власы ошо хоҡуҡһыҙлыҡтарға сик ҡуйыу менән бергә, башҡорт халҡының культураһын артабан күтәреү буйынса туҡтауһыҙ хәстәрлек күрә. СССР Министрҙар Советының Өфө ҡалаһында СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороу тураһындағы ҡарары быға асыҡ миҫал булып тора. Был ҡарар—ленинсә-сталинсә милли политиканың тантанаһы, совет фәненең артабан сәскә атыуына тағы бер яңы вклад.

Беҙ, совет специалистары киләсәктә фәнни белем менән тағы ла ныҡыраҡ ҡоралланып, тыныс ижади тормошта халҡыбыҙҙың киң-күләм шарттарын яҡшыртыу, байыҡтырыу барыуға тағы ла ҙур уңыштарға ирешәсәкбеҙ. Беҙҙең фәнни асыштарыбыҙ — халыҡтың көндәлек талаптарын ҡәнәғәтләндереүгә, илдә коммунизм төҙөү эшен тиҙләтеүгә хеҙмәт итәләр.

Беҙ, был сталинсә хәстәрлеккә яуап итеп, Ватаныбыҙҙың экономик ҡеүәтен нығытыуҙа һәм культураһын артабан күтәреүҙә киләсәктә тағы ла тырышып, бөтә көсөбеҙҙе һалып эшләргә вәғәҙә бирәбеҙ.

Ә. Исмәғилов,
Бөрө район ауыл хужалығы бүлегенең өлкән ветеринар врачы.

Колхозсылар һүҙе!

Беҙҙең Карл Маркс исемендәге ауыл хужалығы артеле члендары ССР Союзы Министрҙар Советының Өфөлә СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороу тураһындағы ҡарарын ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алдылар.

Тыуған республикабыҙҙа Фәндәр Академияһы филиалының ойошторолоуы экономикабыҙҙың һәм культурабыҙҙың тағы ла киңәйеүе өсөн ярҙам итәсәк.

Элек ҡараңғы тормошта йәшәгән башҡорт халҡы совет власы йылдарында ғына белемгә, фәнгә эйә булыу мөмкинлеген алды. Беҙҙең колхоз члендарының тормошона һәм эшенә ҡарағыҙ. Совет агробиологияһы нигеҙҙәренә эйә булыу һәм ошоноң менән баҫыуҙарҙан юғары урожай алыуға өлгәшеү маҡсатында беҙҙең артелдә агротехник түңәрәк эшләп килә, унда 20 кеше уҡый. Колхозсылар Мичуриндең, Вильямстың һәм Лысенконың учениеларын өйрәнәләр һәм уларҙы практик эштә ҡулланалар.

Колхоз ауылы кешеләре башҡорт халҡы тураһындағы һәр көн һайын атайҙарса хәстәрлек күреүсе бөйөк Сталинға рәхмәт белдерәләр.

Ғ. Насыров,
Социалистик Хеҙмәт Геройы, Баймаҡ районы, Карл Маркс исемендәге колхоз агрономы.

Совет фәне—коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренә

2. Ер һуғарыуҙың алдынғы методтары

Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре гигант һуғарыу һәм һыу менән тәьмин итеү системаларын төҙөүҙе үҙ эстәренә алалар, улар бик күп ҡоролоҡло ерҙәрҙең йөҙөн үҙгәртәсәктәр.

Бындай үтә ҙур бурыстарҙы, бөтә хужалыҡ эше халыҡ интерестарына буйһонған, фән һәм техника бөтә общество интерестарына хеҙмәт итә торған социализм илендә генә хәл итергә мөмкин.

Капиталистик илдәрҙә — ергә, һыуға һәм етештереү ҡоралдарына хосуси милк йәшәү шарттарында, — ерҙәрҙе һуғарыу эксплуатация средствоһына, ерҙең уңдырышлылығын йыртҡыстарса файҙаланыу ҡоралына әүерелә, хеҙмәтсән массаларҙың хәйерселәнеүенә һәм һуғарыла торған ерҙәрҙең боҙолоуына килтерә.

Һуғарыуҙы йыртҡыстарса ҡулланыу шуға килтерә: һуғарыусы һыуҙың һөҙөмтәле рәүештә файҙаланыла торған өлөшө игенселәргә һатыла торған һәм һуғарыу системаһына бирелә торған бөтә һыуҙың бик аҙ ғына процентын тәшкил итә. Күп файҙа алыу менән генә ҡыҙыҡһынған һуғарыу системаһы хужалары һыуҙы мөмкин тиклем күп һатырға тырышалар һәм үҫемлектәр өсөн кәрәк булған нормаһынан бик күп күләмдә һыу бирәләр.

Күп һыу биреү беренсе 2—3 йылда урожай алыуҙа бер ни тиклем эффект бирә. Унан һуңғы йылдарҙа артыҡ һыу, ер аҫтындағы һыуҙарҙы күтәреп, һуғарыла торған ерҙәрҙе бәтҡаҡланыуға һәм тоҙланыуға килтерә.

Иген уңдыра торған тупраҡты игенселәр өсөн ярамаҫлыҡ тупраҡҡа әүерелдереүҙең ысын сәбәптәрен — капиталистик системаның үҙе тарафынан тыуҙырыла торған был сәбәптәрҙе йәшереү өсөн реакцион буржуаз «ғалимдар» һуғарыла торған ерҙәрҙең ҡотолғоһоҙ рәүештә батҡаҡлы һәм тоҙло ергә әйләнергә тейешлеге тураһында фәнгә ҡаршы «теория» пропагандалайҙар.

Һуғарыла торған ерҙәрҙең тоҙланыуына һәм батҡаҡҡа әйләнеүенә ҡаршы көрәшеү өсөн капиталистик предпринимателдәр ҡоротоу саралары ғына (дренаж) үткәреп, һуғарыла торған ерҙәргә кәрәгенән артыҡ бик күп һыу биреүҙә дауам итәләр. Был уларға һуғарыу өсөн һыу биргәндә лә, шулай уҡ һуғарыла торған ерҙәрҙе ҡоротоу юлы менән артыҡ һыуҙарҙы бөтөргәндә лә файҙа алырға мөмкинлек бирә. Һыуҙан планлы рәүештә файҙаланыуҙың һәм дөрөҫ агротехниканың булмауы ерҙәрҙең тоҙланыу һәм батҡаҡланыу процессын көсәйтә генә бара.

Мәҫәлән, Америка Ҡушма Штаттарында һуғарыуҙағы бындай ҡырағай ысул 3,5 мең һуғарыу системаһында ҡулланыла. Тоҙланған һәм батҡаҡҡа әйләнгән ерҙәр бында һуғарылырға билдәләнгән бөтә ерҙәрҙең 1920 йылда 33,8 процентын, 1930 йылда 45,1 процентын, фактик рәүештә һуғарыла торған майҙандың 1940 йылда 77,5 процентын тәшкил итә ине. 1940 йылдан һуң АҠШ-та һуғарыла торған ерҙәрҙең хәле тағы ла насарайҙы.

Һуғарыу бурыстары беҙҙең илебеҙҙә башҡаса хәл ителә. Советтар Союзында ерҙәрҙең тоҙланыуын һәм батҡаҡҡа әйләнеүен бөтөрөү ысулдары табылды. Хәҙер индерелә торған яңы һуғарыу системаһы бының өсөн бик әһәмиәтле шарт булып тора.

Бөтә Союз гидротехника һәм мелиорация фәнни-тикшеренеү институты һыуҙы планлы рәүештә файҙаланыу һәм һуғарыу системаларының файҙалы эш итеүҙәре коэффициентын күтәреү методтарын эшләне. Был методтар һуғарыла торған райондарҙағы колхоздарҙа һәм совхоздарҙа уңышлы ҡулланылалар ҙа инде.

Ғалимдар, социалистик игенселектең практиктары менән берлектә, ер һуғарыуҙың ошондай ысулдарын эшләнеләр, был ысулдар ерҙәрҙең тоҙланыуын һәм батҡаҡҡа әйләнеүен тыуҙырыусы сәбәптәрҙе тулыһынса бөтөрөргә һәм элек тоҙланған һәм батҡаҡлыҡҡа әйләнгән ерҙәрҙе үҙләштерергә мөмкинлек бирәләр.

Беҙҙең ғалимдар һәм инженерҙар һыу менән тәьмин итеү методтарын эшләнеләр, был методтар өйәр һыуҙарын (ҡәсле ямғырҙан йәки ҡар иреүҙән йыйылған һыуҙарҙы) игенселек өсөн киң масштабтарҙа һөҙөмтәле файҙаланырға мөмкинлек бирәләр.

Билдәле булыуынса, өйәр һыуҙары була торған ҡыҫҡа бер осорҙа Волга, Дон, Днепр кеүек йылғалар бик күп һыу алып килеләр. Гидроэлектростанциялар төҙөгәндә ҡорола торған плотиналар бындай һыуҙарҙың бер өлөшөн үҙҙәрендә тотоп ҡалалар. Һыу һаҡлана торған урындарҙа тупланған һыу гидроэнергия эшләп сығарыуға китә һәм уның бер өлөшө һыу менән тәьмин итеү кәрәктәре өсөн файҙаланылырға мөмкин. Артыҡ өйәр һыуҙары был маҡсат өсөн йылғанан байтаҡ ситкә ебәрелә һәм, каналдар селтәре буйынса, күп кенә тәбиғи соҡорҙарға һәм яһалма һыу һаҡлау урындарына таратыла, һыу менән тәьмин итеү һәм һуғарыу маҡсаттары өсөн кәрәкле ваҡытта һәм кәрәкле күләмдә файҙаланыла. Мәҫәлән, Днепрҙағы бындай һыуҙар Молочная йылғаһында төҙөлә торған һыу һаҡлауҙы урынды һыу менән тултырыу һәм бик күп һыу запасы булдырыу өсөн файҙаланасаҡ.

Ер һуғарыуҙа яңы системаға күсеү айҡанлы һәм һуғарыла торған күп миллион гектар яңы ерҙәрҙе үҙләштереү кәрәклеге айҡанлы һуғарыу эшендә юғары һөҙөмтәле ысулдарҙы ҡулланыу тураһындағы мәсьәлә алдыбыҙға айырата ҡырҡыулыҡ менән килеп баҫты.

Капиталистик илдәрҙә ҡулланыла торған һуғарыу ысулдары һыуҙы насар файҙаланыу менән генә түгел, бәлки бик түбән хеҙмәт етештереүсәнлеге менән дә характерлана. Арзанлы эшсе көстәр булғас, унда ҡул хеҙмәте ҡулланыла. Бер эшсе бер көндә 0,2—0,4 гектар ерҙе генә һуғара ала.

Беҙҙең илебеҙҙә фән һәм практика тарафынан ошондай һуғарыу ысулдары эшләп сығарылды, был ысулдар, бер эшсенең сменаға 3—5 гектар ерҙе һуғара алыуын тәьмин итә. Хәҙерге ваҡытта һуғарыуҙа яңы методтар — үҙ ағышы менән һәм машина менән эшләү методтары эшләнде һәм ул практикала һынала; был методтар бер һуғарыусы эшсенең сменаға 10—15 гектар ер һуғара алыуына мөмкинлек бирә. Бындай методтарҙы ҡулланыу был эштән бик күп эшселәрҙе бушатырға, һуғарыла торған ерҙәрҙең майҙандарын байтаҡ киңәйтергә һәм ауыл хужалығы культураларын үҫтереүҙе яҡшыртырға мөмкинлек бирәсәк.

Ун миллионлаған гектарҙар менән иҫәпләнә торған бик ҙур массивтарҙы һуғарыу һәм һыу менән тәьмин итеү бик оҙонға һуҙыла торған ҙур һәм ваҡ каналдарҙың ҡатмарлы селтәрен төҙөүҙе талап итә. Ләкин каналдарҙың төбендә тупраҡ ҡына булғанда һыуҙың яртыһынан күбеһе ер өсөнә һеңә.

Каналдарға бирелә торған ошо тиклем һыуҙың файҙаһыҙ рәүештә ергә һеңеүенә, ерҙәрҙе тоҙландырыу һәм батҡаҡҡа әйләндереү ҡоралына әүерелдереүенә килешеп ҡарарға мөмкинме? Юҡ, әлбиттә.

Совет фәне һыуҙың бындай юғалтыуҙарына ҡаршы көрәшеү өсөн файҙалы ысулдар эшләне. Бында каналдың төбөнә һәм стеналарына бетон һалыу һәм асфальтлау ҡулланылмай тиерлек, сөнки ҙур масштабтарҙа улай эшләүҙең техник яҡтан да, экономик яҡтан да мәғәнәһе юҡ. Бында фильтрлауға ҡаршы сара күреү яҡшыраҡ. Мәҫәлән, ҡомло урындарҙа яһала торған каналдар өсөн, кольматация тип йөрөтөлә торған ысул эшләнгән. Был ысул менән эшләгәндә тупраҡтағы ваҡ ҡына тишектәр тәбиғи балсыҡ киҫәктәре менән йәки яһалма рәүештә тупраҡҡа үтеп инә торған һыу менән килтерелә торған балсыҡ менән ҡапланалар. Мәҫәлән, Аму-Дарья йылғаһынан ағып килгән ваҡ балсыҡтар менән Төп Төркмән каналын байтаҡ ҡына оҙонлоҡта кольматациялап була.

Ҡомло булмаған тупраҡ механик йоғонто яһау юлы менән тығыҙландырыла.

Каналдарҙың айырыуса фильтрлаусы тупраҡтарҙа һалынған участкаларында тупраҡты һаҡлаусы ҡатлам аҫтына балсыҡлы экрандар төҙөлә, улар һыуҙың үтеп инеүен туҡтаталар.

Былар ҙың бөтәһе каналдарҙан килә торған һыуҙың файҙаһыҙға юғалыуын, бик арзанлы һәм киң ҡулланыла торған сараларҙы үткәреү арҡаһында, 5—10 тапҡырға кәметеүгә мөмкинлек бирә. Был — мөһим проблеманы уңышлы хәл итеү, тигән һүҙ.

Каналдарға ағып килә торған балсыҡ-ҡомдарға ҡаршы көрәшеү бурысы ла бик ҡатмарлы булып тора. Әгәр ҙә ағып килеүсе ҡом-балсыҡҡа ҡаршы көрәшмәгәндә, мәҫәлән, Төп Төркмән каналында бер йыл эсендә 12 миллион кубометр ҡом, балсыҡ өйөләсәк. Был — каналдың нормаль эшләүен боҙоуы мөмкин. Һыуҙы ҡартлау ҡоролмаһының яңы тибы, Бөтә Союз гидротехника һәм мелиорация фәнни-тикшеренеү институты тарафынан эшләнгән был тип, йылға һыуынан был ташландыҡ ҡомдарҙы айырырға һәм эре ташландыҡтарҙын каналға үтеп инеүҙәренә юл ҡуймаҫҡа мөмкинлек бирә. Шул уҡ ваҡытта ваҡ ташландыҡтар каналдарға үтеп инәләр, улар канал үҙәнен кольматациялау өсөн кәрәк һәм үҙҙәре һыу менән бергә ағып барып ошо торған баҫыуҙар өсөн файҙалы.

Ултырма камераларынан һәм юғыс галереяларҙан торған специаль ҡоролма булыу арҡаһында, каналды таҙартыу буйынса бөтә эш механизациялантан щиттарҙы күтәреү һәм төшөрөүгә ҡайтып ҡала. Был ҡоролманы идара итеүсе ос кеше ошондай ҙур эш башҡаралар, ҡул менән эшләгәндә быны башҡарыу өсөн һәр йылда 16 меңдән артыҡ эшсе кәрәк булыр ине.

Совет гидравликтары һәм гидротехниктары күп һыу үткәрә ала торған һыу үткәргестәре уйлап сығарҙылар, уларҙы ҡулланыу плотиналарҙың һыу үткәргес өлөшөн 10—15 процентҡа ҡыҫҡартырға һәм шуға ярашлы рәүештә ҡыйбатҡа төшөүсе бетон эштәренең күләмен кәметергә мөмкинлек бирәсәк.

Беҙҙең ғалимдарыбыҙ һәм инженерҙарыбыҙ гидротехник ҡоролмалар төҙөү буйынса яңы ҡатмарлы бурыстарҙы уңышлы хәл итәләр. Мәҫәлән, Волга һәм башҡа йылғалар үҙәнендә йомшаҡ нигеҙҙәргә бик ҙур плотиналар төҙөү ысулдары эшләнде.

Ҡеүәтле гидротурбиналар, генераторҙарҙы, электроэнергияны аҙ юғалтып, дефицит материалдарға экономия яһап һәм электроэнергияны бүлеүҙәге төп процестарҙы автоматлаштырып, электр тоғын алысҡа биреү өсөн юғары вольтлы аппаратураның конструкцияларын булдырыу өлкәһендә байтаҡ ҡына уңыштарға өлгәшелде.

Сталинсә эпоханың бөйөк ҡоролмалары Советтар Союзындағы киң хеҙмәтсән массаларҙың ижади көстәрен ҡулланыу өсөн бик ҙур мөмкинлектәр асты.

Фән һәм техника деятелдәре, бөтә совет халҡы менән бергәләп, сталинсә бөйөк төҙөлештәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн бик ҙур дәрт менән эшләйҙәр.

Профессор В. Шауман,
техник фәндәр кандидаты.

Өфө ҡалаһындағы В. Маяковский исемендәге баҡсаға инеү юлы.

Әхмәтьянов фотоһы.

Беҙ коммунизм төҙөйбөҙ

«Беҙ коммунизм төҙөйбөҙ!» [illegible]

Ф. Веревкин,
Бөрө районы «Ленинский Октябрь» колхозы председателе.

Институт ауыл мәктәбенә шефлыҡ итә

[illegible] тел, фәнни, педагогик темаларға лекциялар уҡырға йыш ҡына килеләр.

Ошо көндәрҙә генә доцент Ф. Тимерғазин мәктәпте тамамлаусы уҡыусылар менән «Кем булырға?» тигән темаға бик ҡыҙыҡлы беседа үткәрҙе; марксизм-ленинизм нигеҙҙәре кафедраһының өлкән уҡытыусыһы иптәш Ғәбәйҙуллин уҡытыусылар, ауыл активы, комсомолец йәштәр һәм өлкән класс уҡыусылары өсөн халыҡ-ара хәл тураһында лекция уҡыны.

Ф. Исәнғолов.

Разрядниктар һаны арта

[illegible]

Р. Ғилманов.

ФУТБОЛ

РСФСР беренселеге өсөн футбол ярышы

[illegible] Өфөнөң «Спартак» һәм Свердловск ҡалаһының «Динамо» командалары осрашты. Матчтың тәүге минутынан уҡ инициативаны «Спартак» командаһы алды. Улар беренсе таймда «Динамо» ҡапҡаһына ике туп индерҙеләр. Икенсе таймда ла «Спартак» командаһы үҙ ҡапҡаһына бер тупты үткәрмәйенсә иҫәпте тағы ла бергә арттырҙы. Шулай итеп уйын «Спартак» командаһы файҙаһына 3:0 иҫәбе менән тамамланды.

И. Гершов.

Черниковск ҡалаһының А. Матросов исемендәге урамы.

Әхмәтьянов фотоһы.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Бөзәвә. Әрелтәлгән «Бүләк» колхозындағы төҙөлөш бригадаһы менән тәжрибәле колхозсы иптәш Шәрипов етәкселек итә. Бригада хәҙерге ваҡытта дүрт урында ялмалы ырҙын эшләй. Шулай уҡ мал торлаҡтарына ағымдағы ремонт эштәрен дә башҡара.

Р. Байтимиров.

* * *

Бишбүләк. Апрель аҙағында район май эшләү конторһы работниктарының дөйөм йыйылышы үткәрелеп, сыр ҡайнатыу мастерҙары йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәргә социалистик йөкләмә алғайнылар. [illegible]

А. Петров.

* * *

«Ишембайнефть» трестының [illegible]

М. Тимербулатов.

* * *

[illegible] һәр гектарҙан 25 центнер тарма орлоғо үҫтерергә йөкләмә алды.

И. Николаенко.

* * *

Баймаҡ. Иптәш Янтилин районда иң ҡарт һәм тәжрибәле һунарсыларҙың береһе булып иҫәпләнә. Ул ҡырҡынсы йыл һунарсылыҡ итә инде. Һуңғы өс-дүрт йыл ваҡыт эсендә 58 бүре һәм 150-нән артыҡ төлкө тотоп, тиреләрен государствоның әҙерләүҙәр конторһына тапшырҙы. 1950 йылда ғына 18 бүре тотто.

И. Зарипов.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 7 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе бөгөн, Корея Халыҡ армияһының частары Ҡытай добровольцтары менән тығыҙ бәйләнештә хәрәкәт итеп, бөтә фронттарҙа Америка-Англия интервенттары ғәскәрҙәренең контратакаларын кире ҡаҡтылар, уларҙың йәнле көсөнә һәм техникаһына ҙур юғалтыуҙар килтереүҙе дауам иттеләр, тип хәбәр итте.

Кореяла Голландия батальонының тар-мар ителеүе

ГААГА, 6 июнь. (ТАСС). Голландия матбуғаты Кореялағы һуңғы һуғыштарҙа Голландия батальонының ҙур юғалтыуҙарға осрауы тураһында хәбәр итә. Газета биттәре күп һанда үлтерелгән һәм яраланған Голландия һалдаттары тураһында хәбәрҙәр менән тулы, улар америкалылар тарафынан фронттың иң ҡурҡыныслы участкаларына ебәрелгәндәр. Официаль мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 31 майҙағы бер һуғышта ғына Голландия батальоны бығаса булмаған юғалтыуҙарға осраған.

Көньяҡ Кореяла Америка военщинаһының баш-баштаҡлығы

ПРАГА, 6 июнь. (ТАСС). Телепресс агентствоһының хәбәрсеһе Манилала былай тип хәбәр итә: Американың Манилалағы юғары дәрәжәләге кешеләренең белдереүенә ҡарағанда, Көньяҡ Кореялағы [illegible]

Көнбайыш Германияны ремилитаризациялау дауам итә

[illegible] газетаһы бөгөн Дюссельдорфтан Көнбайыш Германияла хәрби-диңгеҙ флоты баш командованиеһен булдырыу тураһында хәбәр иғлан итте, ул «сик буйын һаҡлауҙың диңгеҙ бүлеге» тип атала һәм Любек лыйындағы Нейштадт ҡалаһында урынлаша.

Уның ҡарамағына өс флотилия бирелгән. Бер өйрәтеү флотилияһы Вельгельмсхафенда буласаҡ. Башҡа флотилиялар составына немец ҡоралы менән ҡоралланған моторлы 1700 судно инәсәк.

Флотилияның личный составы тиҙләтелгән темптар менән формировать ителә.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе тирәһендә

ПАРИЖ, 7 июнь. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Көнбайыштағы өс держава вәкилдәренең һорауы буйынса дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының ултырышы бөгөн тағы ла кисектерелде.

Франция матбуғатының хәбәр итеүенә ҡарағанда, АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре 4 июндәге Совет нотаһына бергәләп яуап биреү өсөн консультация алып барыуҙы дауам итәләр. Кисә, тип яҙа «Фигаро» газетаһы, Дэвис Лондондан ҡайтҡандан һуң «Өсәү» (Джессеп, Дэвис һәм Пароди) бер нисә сәғәт буйына Совет Хөкүмәтенә ниндәй характерҙа яуап биреү кәрәклеге тураһындағы мәсьәләне тикшереү менән шөғөлләнделәр. «Об» газетаһы былай тип яҙа: Франция министрҙәр Советы бөгөн иртән үҙенең ултырышында көнбайыш державаларҙың Совет Хөкүмәтенә нота ебәреүҙәре һәм СССР Хөкүмәтенең был нотаға яуабы айҡанлы килеп тыуған хәлде өйрәнәсәк күрәһең.

Франция газеталарының комментарийҙарына ҡарап фекер йөрөткәндә, өс держава хөкүмәттәре өсөн төп ҡыйынлыҡ шунда тора: Атлантик Пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне килешелмәгән пункт рәүешендә көн тәртибенә индереүҙән баш тартыу өсөн улар ниндәй ҙә булһа яңы, күпме лә булһа нигеҙләнгән һылтау таба алмайҙар. СССР Хөкүмәте был мәсьәләне көн тәртибенә индереүҙе ғәҙел һәм нигеҙле талап итә. «Фигаро» хәбәр иткәнсә, Англияның общиналар палатаһында палатаның лейборист члендарының береһе сит ил эштәре министры Маррисондан: «Совет территорияһына ҡаршы атом һөжүмен яһауға мөмкинлек биреүсе базалар тураһындағы мәсьәләне дүрт министр тарафынан ҡарау тураһында рустар талабына уступка яһау ни өсөн аҡылһыҙлыҡ булыр ине?» тип һораған. Маррисон был һорауға аңлайышлы яуап бирә алмаған, «был төрҙәге базаларҙың бөтәһе лә АҠШ ҡулында түгел», тип буталсыҡ ей[illegible] гән.

Көнбайыштағы өс держава хөкүм[illegible] АҠШ-тың хәрби базалары һәм Атла[illegible] Пакт тураһындағы мәсьәләне ҡар[illegible] нигеҙлекһеҙ баш тартып үҙҙәре-т[illegible] ҡуйған ҡыйын хәлдән сығыу юлы [illegible] ләгән ваҡытта, реакцион газеталар [illegible] тыуған тупиктан сығыуға ҡарата [illegible] нәп-береһе мәғәнәһеҙ булған төрлө [illegible] ҙәр әйтәләр. Мәҫәлән, «Фигаро» газе[illegible] Дэвис был мәсьәләне көн тәртибенә [illegible] деүеү мөмкинлеген иңкәр итмәй, [illegible] министрҙәр Советы тикшереүенә шул[illegible] «Совет Рәсәйһының хәрби ҡеүәте [illegible] раһындағы мәсьәләне лә ҡуйылыу [illegible] шарт булып тора, тип белдерә. Ҡайһ[illegible] газеталар, шул иҫәптән «Попюлер [illegible] ри» көнбайыш державалар тарафы[illegible] «эквивалент сифатында» «коминфор[illegible] раһында» мәсьәлә ҡуйыласаҡ, тип [illegible] дереүгә тиклем барып етәләр.

Бындай фекерҙәрҙе АҠШ, Велико[illegible] тания һәм Франция хөкүмәттәренең [illegible] ниәттәренә ни тиклем ярашлы булу[illegible] әйтеүе ҡыйын. Ләкин көнбайыштағ[illegible] держава идара итеүсе ҡурҙары [illegible] мәһе буйынса матбуғат органдары [illegible] фынан уларҙың асыҡтан-асыҡ әйте[illegible] был державаларҙың хөкүмәттәре [illegible] лыҡты таъмин итеүҙе мөһим пробле[illegible] ларын ҡарауға саҡырылған минист[illegible] Советының көн тәртибенә Америка [illegible] хәрби базалары һәм Атлантик Пакт т[illegible] һындағы өлгөрөп еткән мәсьәләне инд[illegible] буйынса асыҡ һәм нигеҙлекле совет [illegible] димена ҡаршы бер генә дәлил ҙә [illegible] алмауҙарын күрһәтә, ә Атлантик Пак[illegible] төҙөү СССР менән өс көнбайыш держ[illegible] араһында мөнәсәбәттәрҙең насарайы[illegible] төп сәбәп булды. Был совет тәҡди[illegible] кире ҡағыу — ул йәшәп килгән хал[illegible] көсөргәнешле хәлде һаҡлау һәм Со[illegible] тәр Союзы менән мөнәсәбәтте яҡшыр[illegible] ға теләмәүҙе күрһәтеү, тигән һүҙ. Б[illegible] тыуған хәлдең асылы бына шунда [illegible] һәм өс держава хөкүмәттәре, [illegible] үҙ-ара нисек кенә ҙаҡ кәңәшләш[illegible] ҙә, бынан ҡотола алмаҫтар.

Берлиндең Англия секторы комендантына Совет контроль комиссияһы вәкиленең хаты

БЕРЛИН, 7 июнь. (ТАСС). Берлиндәге совет контроль комиссияһының вәкиле С. А. Деньгин 6 июнда Берлиндең Англия секторы коменданты генерал-майор Борнуға хат ебәрҙе, унда былай тип әйтелә:

«Германияла ремилитаризациялауға ҡаршы һәм уның менән 1951 йылда ярашыу договоры төҙөү өсөн дөйөм герман хәрәкәтендә ҡатнашыусы ҡала тимер юлының хеҙмәткәрҙәренә ҡарата Берлиндең Англия секторындағы Көнбайыш Берлин полицейскийҙарының юл ҡуйылғыһыҙ мөнәсәбәттәренең яңы күп кенә фактарына һеҙҙең иғтибарығыҙҙы йүнәлтәм.

1951 йылдың 22 майында Шпандау станцияһының хеҙмәт бинаһына Көнбайыш Берлин полицейскийҙары бәреп ингәндәр һәм, тимер юлсыларҙың протестарына ҡарамаҫтан, профсоюз йыйылышын ҡыуып таратҡандар.

1951 йылдың 22 майында Шарлоттенбург станцияһының профсоюз ойошмаһы председателе һис бер нигеҙһеҙ ҡулға алынған.

1951 йылдың 29 майында Халензее станцияһында Көнбайыш Берлин полицейскийҙары тимер юлсыларҙың юл хеҙмәткәрҙәрен ҡыҙыҡһындырыусы мөһим мәсьәләләрҙе тикшереүгә арналған йыйылышын ябырға маташҡандар. Был ваҡытта полицейскийҙар юлдың 4 хеҙмәткәрен ҡулға алғандар. Уларҙың береһе ошо көнгә тиклем ябылып тотола.

1951 йылдың 31 майында Көнбайыш Берлиндең 10 полицейскийы Халензее-Весврейц участкаһында ҡала тимер ю[illegible] электр станцияһы бинаһына инг[illegible] Полицейскийҙар законһыҙ тентеү үт[illegible] гәндәр, подстанция начальнигын һәм [illegible] сене ҡулға алғандар.

Берлиндең көнбайыш секторында [illegible] ныслыҡ һәм Германияның бер[illegible] яҡлаусыларҙы эҙәрләүҙе табан[illegible] торған ваҡиғалары Көнбайыш Берли[illegible] лицияһының үҙенең демократияға ҡа[illegible] эшмәкәрлегендә оккупацион власт[illegible] яҡлауы менән файҙаланыуын күр[illegible] Атап әйткәндә, был шуның менән и[illegible] лана: Берлиндәге Англия властар[illegible] 1951 йыл 16 апрелдәге хатына ҡар[illegible] тан, ошо көнгә тиклем Германияны [illegible] кратизациялаштырыу яҡлыларҙы эҙә[illegible] ҙе бөтөрөү өсөн бер ниндәй ҙә са[illegible] мәнеләр.

Көнбайыш Берлин полицейскийҙар[illegible] законһыҙ хәрәкәттәре Германияның т[illegible] лыҡ һөйөүсе һәм демократик государ[illegible] итеп үҙгәртеп ҡороуҙы күҙәтеүсе [illegible] мания һәм Берлин тураһында П[illegible] һәм башҡа дүрт яҡлы килешеүҙәргә [illegible] шы килә, тип айырыуса әйтеп кит[illegible] кәрәкле һанайым.

Деньгин ҡаланың Англия секторы[illegible] Көнбайыш Берлин полицейскийҙарын[illegible] конһыҙ хәрәкәттәрен һис кисекмәй[illegible] туҡтатыуҙы һәм ҡала тимер юл[illegible] ябылып тотолоусы хеҙмәткәрҙәрен [illegible] рыуҙы талап итте.

Редактор F. F. ҒАФАРОВ.

СӘСЕҮЛЕКТӘРҘЕ ӨЛГӨЛӨ ТӘРБИӘЛӘРГӘ

Башҡортостан баҫыуҙарында быйыл иртә культураларҙы сәсеү агротехник сроктарҙа, фән талаптары нигеҙендә үткәрелде. Иң ҡиммәтле аҙыҡ культураһы булған бойҙайҙы сәсеү байтаҡ арттырып уталды. Яҙғы баҫыу эштәренең ошолай уңышлы үткәрелеүе менән 1951 йылдың юғары урожайына нигеҙ һалынды. Был — Башҡортостан колхозсыларының, МТС һәм совхоз эшселәренең илебеҙҙә коммунизм төҙөүгә, бөтә донъяла тыныслыҡты нығытыуға индергән вклады булып тора.

Республикабыҙҙың социалистик ауыл хужалығы алдында хәҙер юғары урожай өсөн көрәштең икенсе этабы бурыстары — сәсеүлектәрҙе өлгөлө тәрбиәләү бурыстары тора. Был осорҙағы эштәрҙең үҙ ваҡытында һәм яҡшы итеп башҡарылыуы баҫыуҙарҙа юғары урожай үҫтереүҙе тәъмин итәсәк.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү — мөһим агротехник сара ул. Тәрбиәләүҙең төп агротехник бурысы культуралы үҫемлектәр өсөн тупраҡта үҫеү шарттарын яҡшыртыуҙан, уларҙы дым һәм аҙыҡ матдәләре менән тулы тәъмин итеүҙән, һәр төрлө ауырыуҙарҙан һәм үҫемлек ҡоротҡостарынан һаҡлауҙан, ашлыҡтарҙың орлоҡланыуҙары өсөн яҡшы шарттар тыуҙырыуҙан тора. Бының өсөн, культураларҙың төрөнә, сортына һәм баҫыуҙарҙың үҙенсәлегенә ҡарап, төрлө агротехник ысулдар ҡулланыла. Пропаш культураларҙың һәм киң рәтле сәсеүлектәрҙең теҙмә рәт араларында тупраҡты йомшартыу, айырым культураларҙы рәттәрҙә һирәкләндереү, бөтә культураларҙың сәсеүлектәрен дә өҫтәмә аҙыҡландырыу, һуғарыу, яһалма һеркәләндереү, шулай уҡ был маҡсатта бал ҡорттарын файҙаланыу, үҫемлек ауырыуҙарына һәм ҡоротҡостарына ҡаршы көрәш ойоштороу — сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙәге үҙенсәлекле саралар улар. Тәрбиәләүҙә бөтә культуралар өсөн уртаҡ сара — ул утау.

Ҡый үләндәре — культуралы үҫемлектәрҙең дошманы ул. Быйыл яҙҙың иртә килеүе һәм май айында көндәрҙең ямғырлы һәм һалҡынса тороуы баҫыуҙарҙа ҡый үләндәренең үҫеүҙәре өсөн ыңғай шарттар тыуҙырҙы. Бына шуға күрә лә быйыл утауҙы ойоштороу айырыуса мөһим урынды тота. Ҡый үләндәренә ҡаршы үҙ ваҡытында һәм даими көрәш алып барылмаһа, улар сәсеүлектәрҙе ҡаплаясаҡтар, урожайлылыҡты кәметәсәктәр.

Орлоҡсолоҡ участкаларын тәрбиәләүгә айырыуса иғтибар итергә кәрәк. Был эш һәр бер культура буйынса хужалыҡтың орлоҡ талабын тәъмин итеүгә, юғары урожайлы, урындағы сортлы орлоҡтар етештереүгә мөмкинлек бирәсәк. Былтыр орлоҡсолоҡ участкаларын тәрбиәләү, нигеҙҙә, яҡшы ойошторолдо һәм һөҙөмтәлә республикабыҙҙың күпселек райондары быйыл яҙғы сәсеүҙе үҙ орлоҡтары менән үткәреүгә өлгәште. Был уңышлы тәжрибәне быйыл нығытырға тейешбеҙ.

Маҡар районының Карл Маркс исемендәге колхозында хәҙер бойҙай һәм һоло баҫыуҙарындағы ҡыйҙар утала. Туймазы районы колхоздарында ла сәсеүлектәрҙе утау массовый төҫ алды.

Ләкин күп кенә райондарҙа сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе ойоштормайҙар. Мәҫәлән, Күгәрсен районы Куйбышев исемендәге колхоздың 1-се номерлы бригадаһы баҫыуҙарында бойҙай һәм һоло сәсеүлектәрен ҡый үләндәре баҫҡан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, колхоз председателе Рябиченко һәм район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Байгилдин иптәштәр сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү тураһында хәстәрләмәйҙәр. Ҡырмыҫҡалы, Ғафури, Краснокама, Янауыл һәм башҡа райондарҙа пропаш һәм техник культураларҙың рәт араларын эшкәртеүҙе һуҙлаталар.

Беҙҙең социалистик ауыл хужалығыбыҙ машина техникаһына бай. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә күп хеҙмәт һалыуҙы һәм йылдам башҡарыуҙы талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу өсөн мөмкинлектәр ҙур. Пропаш культураларҙың һәм киң рәтле сәсеүлектәрҙең теҙмә рәт араларын, башлыса, механизм көсө менән эшкәртелергә тейеш. Бының өсөн МТС-тарҙың тракторҙарын, культиваторҙарын эшкә әҙерләргә, уларҙың эшен ойошторорға кәрәк. Ләкин Благовар, Бөзәвә һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың МТС-тары пропаш культураларҙы тәрбиәләү өсөн тракторҙарҙы һәм культиваторҙарҙы әҙерләмәгәндәр.

Быйыл республикала беренсе тапҡыр химик ысулда утау саралары ойоштороласаҡ. Ауыл хужалығы специалистары — агрономдар, агротехниктар, МТС механизаторҙары юғары урожай өсөн көрәштә фән ҡаҙаныштарын, алдынғы тәжрибәләрҙе, механизацияны ҡулланыуҙы ойоштороусылар булырға тейештәр.

Район ауыл хужалығы бүлектәре, МТС, ЛЗС етәкселәре, совхоз директорҙары һәм колхоз председателдәре сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү буйынса ойоштороу сараларын планлаштырырға бурыслылар. Трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларына, һәр бер тракторисҡа, колхозсыға көндәлек һәм смена нормаһы бирелергә, заданиеның үтәлеше даими тикшерелергә тейеш. Утау эшенә бөтә колхозсыларҙы, ҡарттарҙы ла һәм үҫмерҙәрҙе лә ылыҡтырырға, уларҙың ваҡ группалы һәм индивидуаль сдельщина нигеҙендә, социалистик ярыш байрағы аҫтында эшләүҙәрен ойошторорға кәрәк.

Былтыр республикабыҙҙа бик күп колхоздар һәм райондар, төп иғтибарҙы орлоҡсолоҡ участкаларын тәрбиәләүгә бүлеп, дөйөм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе тейешенсә ойошторманылар. Күп урындарҙа сәсеүлектәр үҙ ваҡытында уталмаһы, сортлы утау һәм яһалма һеркәләндереү саралары ҡулланылманы. Тотош майҙандарҙа юғары урожай үҫтереүҙе тәъмин итеү өсөн быйыл һәр бер колхозда һәм совхозда орлоҡсолоҡ участкалары ла, шулай уҡ дөйөм сәсеүлектәрҙәге бөтә төр ашлыҡтар ҙа өлгөлө тәрбиәләнергә тейештәр. Ә бының өсөн эште хәҙерҙән үк башларға кәрәк.

Быйыл яҙғы сәсеүҙең ойошҡан рәүештә, агротехник сроктарҙа үткәрелеүе һәм климат-һауа шарттарының яҡшы булыуы юғары урожай үҫтереүгә өмөт бирә. Был яҡшы өмөттө аҡлау өсөн, күп көс һалып сәскән баҫыуҙарыбыҙҙа юғары урожай үҫтереүҙе тәъмин итеү өсөн хәҙер иң мөһиме тәрбиәләүҙе ойоштороуҙан тора. Сәсеүлектәрҙе яҡшы һәм ентекле тәрбиәләү — урожайлылыҡты күтәреүҙең өҫтәмә резервы булып тора. Уны тулыһынса файҙаланыу беҙҙең бөгөнгө почетлы бурысыбыҙ.

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа хәҙер һуңғы культураларҙы сәсеүҙе һәм пар һөрөүҙе тиҙерәк тамамлауҙы ойоштороу менән бергә, был эштәрҙән бушаған бөтә эшсе һәм тартыу көстәрен сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә туплап кәрәк.

Урындарҙа партия һәм совет ойошмалары, ауыл эшсәндәренең юғары урожай өсөн ижади хеҙмәт күтәрелешенә етәкселек итеп, был бурыстың уңышлы башҡарылыуы өсөн бөтә сараларҙы күрергә бурыслылар.

Ф. Бикбаев.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡорт государство опера һәм балет театрында «ГАЛЬКА». Башлана кискә 8 сәғәт 30 минутта.

Луначарский исемендәге баҡсала — рус драма театрында «ТОРМОШ ӨСӨН КӨРӘШ». Башлана кискә 8 сәғәт 30 минутта.

«Октябрҙә» — «ТЫНЫСЛЫҠ Б[illegible] ДОНЪЯЛА ЕҢЕР».

«Салауатта» — «НЕБЕСНЫЙ ТИХОХ[illegible]

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «ЗОЛУШКА».

«Уралда» — көндөҙ «СУВОРОВ», [illegible] «КӨТ МИНЕ».

ЧЕРНИКОВСК НЕФТЬ ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 уҡыу йылына уҡыусылар ҡабул итә.

Техникум СССР Нефть промышленносе министерствоһының нефть эшкәртеүсе заводтары өсөн техник-механиктәр һәм техник-технологтар әҙерләй.

УҠЫУ СРОГЫ 4 ЙЫЛ.

Техникумдың 1-се курсына ете йыллыҡ белеме булған кешеләр алына. 1950—1951 уҡыу йылында 7-се класты бөтә фәндәрҙән дә „отличнога" тамамлаусылар техникумға һынауһыҙ алыналар.

Ҡабул ителгән уҡыусыларға стипендия бирелә. Райондарҙан килгәнләргә квартира хаҡы түләнә.

Ғаризалар 1951 йылдың 1 июненән 31 июленә тиклем ҡабул ителә. Ғаризаға түбәндәге документтар теркәп бирелә: белеме тураһында таныҡлыҡ (подлинникта), тыуыуы тураһында таныҡлыҡ, һаулығы тураһында справка, йәшәгән урынынан справка һәм хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте (хәрби учетта тороусылар өсөн) хаҡында справка, 3 фотокарточка.

Ҡабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августа тиклем үткәрелә.

Техникумдың адресе: Черниковск ҡалаһы, Ленин урамы, 64-се номерлы йорт. Телефон 3-16-84.

Дирекция.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

Ч 04323 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№ 113 (8830) 1951 йыл 10 ИЮНЬ йәкшәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башҡорт АССР-ы Яңауыл районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, машина-трактор станциялары работниктарының һәм ауыл хужалығы специалистарының йөкләмәһе (1-се бит).

ЮЛ ТӨҘӨҮ АЙЛЫҒЫНДА.

Ш. ШАЙМУРЗИН. — Зур ойошҡанлыҡ менән (1-се бит).

А. НИКОЛАЕВ. — Задание срогынан алда үтәлә (1-се бит).

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА.

ВКП(б)-ның БАШҠОРТОСТАН ӨЛКӘ КОМИТЕТЕ ПЛЕНУМЫ.

Республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерлек һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында (2-се һәм 3-сө биттәр).

Полиция-фашистик провокацияға ҡаршы Париж хеҙмәтсәндәренең протесттары (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Франция коммунистар партияһының протесы (4-се бит).

ИНФОРМАЦИОН БЕЛДЕРЕҮ

7-8 июндә ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитетенең пленумы булып үтте.

Пленум түбәндәге мәсьәләләрҙе тикшерҙе:

1. Республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерлек һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында. (Докладсы ВКП(б)-ның Өлкә Комитете секретары С. Ә. Ваһапов).

2. ВКП(б) Черниковск ҡала комитетенең эше тураһында. (Докладсы ҡала комитете секретары Ш. М. Пацурия).

ВКП(б)-ның Өлкә комитете пленумы тикшерелгән мәсьәләләр буйынса тейешле ҡарар ҡабул итте.

МӘКТӘПТӘРГӘ ЯРҘАМ АЙЛЫҒЫН ОЙОШҠАНЛЫҠ МЕНӘН ҮТКӘРӘЙЕК!

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете бюроһы ҡарары буйынса бөгөн яңы уҡыу йылына әҙерлектә мәктәптәргә ярҙам итеү айлығы башлана. Был айлыҡта мәктәптәрҙең 1951—1952 уҡыу йылына алғала әҙерлектәрен тәьмин итергә кәрәк. Яңы уҡыу йылына алғала әҙерлек өсөн социалистик ярыштың инициаторы булған Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәренең мөрәжәғәтен хуплап, партияның Өлкә Комитеты бына ошондай бурысты ҡуйҙы.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы үҙенең ҡарарында партияның район һәм ҡала комитеттарын, район һәм ҡала Советтары исполкомдарын мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү буйынса район һәм ҡала хеҙмәтсәндәренең социалистик ярышын ойоштороға мәжбүр итте һәм мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына яҡшы әҙерләгән өсөн, социалистик ярышта беренсе урынды алған район һәм ҡала өсөн күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар булдырырға ҡарар итте.

Мөрәжәғәт иғлан ителгәндән һуң үткән ваҡыт эсендә республика мәктәптәрендә Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәренең саҡырыуы алғаһында эшселәр, колхозсылар һәм бөтә общественность тарафынан мәктәптәргә ярҙам итеү буйынса байтаҡ эштәр башҡарылды. Күп кенә мәктәптәр яңы уҡыу йылына әҙерлек эштәрен уҡыу йылы тамамланмаҫтан элек үк башланылар. Ремонт эштәрен алып барыу өсөн кәрәкле материалдар әҙерләнде.

Күгәрсен районында, мәҫәлән, Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәре мөрәжәғәтен алыу менән уҡ уның инициативаһы ныҡлы йәйелдерелде. Мәктәп коллективтары, колхозсылар, общественный ойошмалар яңы уҡыу йылына әҙерлек буйынса күп кенә эш башҡара алдылар. Бында айлыҡтың эсендә мәктәптәрҙе ремонтлау 40 процентҡа үтәлде. Мәктәп усадьбаларында ағастар ултыртылды. Мрәҡ ете йыллыҡ мәктәбендә талап ителгән бөтә 400 кубометр утын әҙерләнде, мәктәп эргәһендә ихатала ла ниҙер. Общественность ярҙамында уҡыу йорттары балалары өсөн ялы айы ойошторолдо.

Районда мәктәптәргә уҡытыусылар кадрҙары менән тулыландырыу буйынса ла тейешле саралар күрелә. Быйыл унда уҡытыусылар коллективтары юғары һәм урта белемле 32 кеше менән тулыландырылаҡ. Шуның менән бергә, уҡытыусыларҙа торлаҡ шарттары тыуҙырыу буйынса ла ҙур эштәр башҡарыла. Мәҫәлән, Юлдыбай һәм башҡа ауылдарҙа — бөтәһе 5 урында уҡытыусылар өсөн торлаҡ йорттары һалына.

Уҡытыу-тәрбиә эштәрен уңышлы ойоштороу өсөн мәктәптәргә уҡыу пособиеларын әҙерләү ҙә ваҡытында әҙерләнергә, күргәҙмә материалдарҙы етерлек күләмдә булдырыу мөһим. Салауат районының Насибаш урта мәктәбе коллективе был тарафта уңышлы ғына эш алып бара. Унда быйыл йәйҙә тәбиғәт мөйөшө ойошторола. Быйыл өсөн махсус йорт булдырылған һәм ике теплица, ике куян балалары һәм башҡа тере уголоктар алынған. Мәктәптең ҙур баҡсаһы бар, унда 2500 тал ағасы, 250 тал алма ағасы, 100 тал ҡарағат ҡыуаҡтары һәм башҡалар үҫтерелә. Был эштәр өсөн уҡытыусылар арһиналарында материалистик агробиология фәне белемдәрен пропагандалауға ярҙам итәсәк.

Яңы уҡыу йылына әҙерлектә быйыл бик байтаҡ эштәр башҡарылыуға ҡарамаҫтан, әле лә урыны-урыны менән уның етешһеҙлектәре ҙә бар. Ҡайһы бер районларҙа мәктәптәрҙе ремонтлау эше әлегә тиклем башланмаған. Быны рәсми ҡарарҙарҙан күрергә мөмкин. Бәләбәй, Ҡырмыҫҡалы райондарында мәктәптәрҙе ремонтлауҙы ойоштороу һаман да түбән кимәлдә тора. Мәктәптәргә ярҙам буйынса эштәр айлығына ныҡлап ойошторолмаған, айлыҡ бер ни тиклем генә эшләнгән. Ҡайһы бер мәктәптәрҙә әле лә ремонт эштәрен саралар бар. Мәктәптәр яҙ көнө уҡ бирелгән ремонт, етерлек материалдарҙы алып ремонтлау буйынса ла ҙур эштәр бар. Айлыҡта Мәктәптәрҙе ремонтлау ваҡытында түбәнән йыш ҡына ямғыр үтә торғайны.

түбәһенән йыш ҡына ямғыр үтә торғайны. Шулай ҙа бында ошо хәлдән тейешле һабаҡ алынмаған. Яңы уҡыу йылына әҙерлеккә, шул иҫәптән мәктәпте ремонтлауға, әле һаман да тотонмағандар. Ғөмүмән, Иглин районы мәктәптәрендә айлыҡ башланыуға тиклемге осор яңы уҡыу йылына сериоз әҙерлек алып барыу менән билдәләнмәне. Быны дөрөҫләү өсөн тағы ошондай бер миҫалды килтереү ҙә етә. Райондың Иҫке Ҡобау башҡорт урта мәктәбе өсөн бина төҙөүҙе, етерлек тиклем материалдар булыуға ҡарамаҫтан, һаман һуҙып киләләр.

Был хәл урындағы партия һәм совет ойошмаларының мәктәптәр эшенә етерлек тиклем иғтибар бирмәүҙәрен күрһәтә. Мәктәптәргә яңы уҡыу йылына әҙерлектә ярҙам буйынса 10 июндән алып 10 июлгә тиклем үткәреләсәк айлыҡта бындай етешһеҙлектәр бөтөрөлөргә, мәктәптәр яңы уҡыу йылына тулыһынса әҙерләнергә тейештәр.

Яңы уҡыу йылына әҙерлектә общественностең актив ҡатнашыуына, уҡыу-күргәҙмә пособиеларҙы әҙерләүҙә һәм ремонтлауҙы уҡытыусылар, шулай уҡ уҡыусылар көсө менән башҡарыуға өлгәшергә кәрәк. Мәктәптәрҙе ремонтлау һәм яңылары төҙөү буйынса воскресниктар ойоштороу, шик юҡ, ыңғай һөҙөмтәләр бирәсәк.

Шулай уҡ ремонт ваҡытында государстволан бирелгән сумма тулыһынса файҙаланыуы буйынса ҡатыраҡ контроль булдырырға кәрәк. Бынан алда ла ҡайһы бер мәктәптәргә ремонтлауға государство тарафынан бирелгән финанс саралары тиҙ файҙаланылмай. Был кимселектәрҙе финанс бүлектәре бөтөрөргә тейеш.

Ошо айлыҡта уҡытыусылар өсөн мәктәптәр эргәһендә интернаттар төҙөү һәм булдырыу мөһим бурыстарҙың береһе булып тора. Уҡыусыларҙың йылы ваҡытында яңы йорттарға күсеүен тәьмин итеү, балалар өсөн интернаттар төҙөү — партия, совет ойошмаларының иғтибар үҙәгендә торорға тейеш.

Балалар — беҙҙең илдәбеҙҙең киләсәге. Беҙҙең илебеҙҙә бер генә бала ла уҡыуҙан ситтә ҡалмаҫҡа тейеш. Бөтә балаларҙы мәктәпкә йәлеп итеү — беҙҙең төп бурыстарҙың береһе.

Мәктәптәрҙе квалификациялы, әҙерлекле уҡытыусылар менән комплектлау, уларҙың белемен күтәреү, уҡытыусыларҙы даими рәүештә ярҙам итеү кәрәк.

Беҙҙең мәктәптәребеҙ государствоның ҙур хәстәрлеге менән солғап алынғандар. Мәктәптәрҙең селтәре йылдан-йыл киңәйә. Мәғариф эше өсөн ассигнованиелар ҙа арта бара. Башҡорт АССР-ы Верховный Советының икенсе сессияһы раҫлаған 1951 йылда республика бюджетында мәғариф эшенә 594 миллион һум аҡса бүленде. Был 1950 йылға ҡарағанда 30 миллион һумға артығыраҡ. Айлыҡ буйынса 1951 йылда мәктәптәр өсөн 633 меңдән арттырылды. Тағы ла ҡарағанда, 31 меңгә күберәк бала уҡыясаҡ.

Верховный Совет тарафынан билдәләнгән был саралар мәктәптәргә уңышлы алып барыуға ҙур ярҙам итәсәк. Был саралар тормошҡа ашырылыуы өсөн уҡыусылар материаль базаны артабан ныҡытыу мөһим шарт булып тора.

Мәктәптәргә ярҙам айлығын уңышлы үткәреү буйынса республика ауыл районлыҡ ойошмалары — партия, совет һәм профсоюз ойошмаларының, предприятие һәм колхоз етәкселәренең — бөтә общественностең мөһим бурысы ул.

Беҙҙең хеҙмәтсәндәр араһында айлыҡтың әһәмиәтен ныҡлап аңлатыуға һәм уҡыу ойоштороуға ярҙам итергә кәрәк. Мәктәптәрҙе ремонтлау, уҡыусыларҙы шәхсән башҡарыу, мәктәптәрҙе интернаттар менән ҡыҫҡа ваҡытта яҡшы иттереп уҡыусыларға, мәктәптәрҙе йылы, яҡты биналар менән тәьмин итеү өсөн күп эштәр башҡарырға һәм һәр бер мәктәп айлыҡ ваҡытында ыңғай һөҙөмтәләр бирергә тейеш.

Ҡала һәм район хеҙмәтсәндәре араһында социалистик ярышты киң йәйелдереп, ВКП(б) Өлкә Комитетенең күсмә Ҡыҙыл Байраҡтарын алыу өсөн көрәште киң йәйелдерәйек!

Йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәштә

Стәрлетамаҡ (Телефон аша). Районның илселәре быйыл юғары урожай йыйыу өсөн социалистик йөкләмәләр алдылар. Хәҙер ярыш йөкләмәләрен үтәү буйынса ҙур эштәр алып барыла. Сталин исемендәге колхоз сәсеүсәре түбәнлеге айырыуса яҡшы ойошторолдо. Хәҙер мең гектар ергә артык бер ут ултыртылды. Колхоздар 60 гектар шәкәр сөгөлдөрө яҡшы сифатлы итеп утаны. Хәҙер сөгөлдөр үҫемлектәрен һиҙергә бер минерал ашламалар менән ашлау ярышы эштәре башҡарыла.

Башҡорт АССР-ы Яңауыл районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, машина-трактор станциялары работниктарының һәм ауыл хужалығы специалистарының

ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Беҙ, колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС работниктары һәм ауыл хужалығы специалистары, Украина игенселәренең өлгөһө буйынса, үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе иҫәпләп сығып, 1951 йылға түбәндәге социалистик йөкләмәләрҙе алабыҙ:

Баҫыусылыҡ буйынса

Бөтә культураларҙың сәсеүлек майҙандарын 4800 гектарға киңәйтергә.

Бөртөклө культураларҙың дөйөм сәсеүлектәренең һәр гектарынан 100-әр бот, орлоҡсолоҡ участкаларынан 110-ар бот урожай алырға.

Күк һарыҙ орлоғо һәм тамыры буйынса, техник, майлы, йәшелсә, мал аҙығы культуралары һәм картоф буйынса урожай алыу планын арттырып үтәүгә өлгәшергә.

«Азат» колхозында 310 гектар яҙғы бойҙайҙың һәр гектарынан 120-шәр бот, ә иптәш Мөхәмәтханов бригадаһында — 130-ар бот урожай алырға.

«Яңы юл» колхозында бөртөклө культураларҙың бөтә майҙанының һәр гектарынан 115-әр бот.

«Искра» колхозында 600 гектар майҙандағы арыштың һәр гектарынан 135-әр бот һәм 270 гектар клеверҙең һәр гектарынан 27-шәр центнер орлоҡ урожайы алырға.

Сталин исемендәге колхозда 390 гектар майҙандағы яҙғы бойҙайҙың һәр гектарынан 120-шәр бот.

«Коммунар» колхозында күк һарыҙ тамыры урожайы алыу планын 150 процентҡа һәм орлоҡ алыу планын 175 процентҡа арттырып үтәргә.

М. Ғафури исемендәге колхозда, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаты иптәш Сафина етәкселек иткән күк һарыҙ үҫтереү бригадаһында күк һарыҙ тамыр урожайын алыу планын 175 процентҡа һәм орлоҡ урожайы алыу планын 200 процентҡа арттырып үтәргә.

Урожайҙы үҙ ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйып алырға. Государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда, 1 октябргә үтәргә.

Малсылыҡ буйынса

Бөтә колхоздарҙа ла продукт бирәүсе общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын һәм кошсолоҡто үҫтереү планын үтәргә, малдар өсөн етерлек күләмдәрҙә һутлы, тупаҫ һәм концентрат аҙыҡтар әҙерләргә. Общественный малсылыҡты кәрәкле торлаҡтар менән тәьмин итеп, ҡышҡа әҙерлекте 15 октябргә тамамларға.

Һәр бер 100 баш инә малдан кәмендә 65 ҡолон, 100 быҙау, 120 бәрәс, 1400 сусҡа балаһы алып үҫтерәсәкбеҙ.

Фураждағы һәр бер һыйырҙан 1700-әр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 3,3 килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы һәм һәр бер тауыҡтан уртаса 80-шәр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

100 баш мөгөҙлө эре малды, 3100 баш һарыҡты, 1000 баш сусҡаны һимертеүгә ҡуйырға.

Чкалов исемендәге колхозда продукт бирә торған общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын: мөгөҙлө эре малдар буйынса 115 процентҡа, һарыҡтар буйынса 130 процентҡа, сусҡалар буйынса 115 процентҡа үтәргә.

«Искра» колхозында мөгөҙлө эре малдар үҫтереүҙең минимум планын 120 процентҡа, сусҡалар буйынса 150 процентҡа үтәргә. Һәр бер 100 гектар һөрөнтө ер майҙаны иҫәбенә 4-әр баш сусҡа һимертергә.

«Правда» колхозында һыйыр һауыусы иптәш Ғарифуллина 12 баш һыйырҙан 12 быҙау алып үҫтереүгә һәм фуражланы һәр бер һыйырҙан 2500-әр литр һөт һауып алырға йөкләмә алды.

Буденный исемендәге колхозда ат ҡараусы иптәш Әхмәтшин 12 бейәнән 12 ҡолон алып үҫтерергә һүҙ бирҙе.

«Коммунар» колхозында сабан иптәш Хужина 100 баш һарыҡтан 130 бәрәс алып үҫтерергә йөкләмә алды.

Район буйынса тәбиғи болонлоҡтарҙың һәр бер гектарынан 16-шар центнер, сәсеп үҫтерелгән бер йыллыҡ үлән баҫыуҙарының һәр гектарынан 25-әр центнер, күп йыллыҡ үләндәрҙең һәр гектарынан 30-ар центнер бесән урожайы алырға.

Районның колхоздарында күсле умарталар һанын 8600 башҡа еткерергә, быйылда сығарылған һәр бер бал ҡорто

семьяһынан 40-ар килограмм валовой бал, 900-әр грамм балауыҙ алырға.

Һигеҙ колхозда малсылыҡ фермаларындағы күп хеҙмәт һалыуҙы талап иткән эштәрҙе механизациялаштырырға.

Государствоға ит, һөт һәм башҡа малсылыҡ продукттары тапшырыуҙың йыллыҡ планын срогынан алда, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 34 йыллығы көнөнә үтәргә.

Машина-трактор станциялары буйынса

Йомшаҡ ер һөрөүгә әйләндереп иҫәпләгәндә һәр бер 15 ат көслө тракторға кәмендә 650 гектар ерҙе яҡшы сифатлы итеп эшкәртергә өлгәшергә.

15 футлы һәр бер комбайн менән кәмендә 300 гектар майҙандың урожайын йыйнарға. МК — 1100 молотилкаһында 650 тонна ашлыҡ һуғырға. Яғыулыҡтың кәмендә 5 процентын экономия яһауға өлгәшергә. Тунға һөрөүҙә предплужниклы һабандарҙы ҡулланып, 56.000 гектар майҙанды һөрөүҙе 15 октябргә тамамларға.

Байғужа МТС-ында иптәш Ғәрәевтең трактор бригадаһы 15 ат көслө һәр бер тракторға 1100 гектар, Яңауыл МТС-ында иптәш Сәләхова бригадаһы — 1000 гектар ер эшкәртергә йөкләмә алды.

Яңауыл МТС-ында комбайнер Ғаттаров һәм Байғужа МТС-ында Абдуллин иптәштәр тапшылмалы ике «Сталинец—6» комбайны менән 1100-әр гектар майҙандың урожайын йыйнарға йөкләмә алдылар.

Беҙ ауыл хужалығының эсен резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу, урожайҙылыҡты күтәреү һәм ауыл хужалығы производствоһын артабан үҫтереү өсөн көрәштә социалистик ярыш иң киң йәйелдерергә, ҙур хеҙмәт ҡаһарманлығы күрһәтергә тейешбеҙ.

Беҙ алған йөкләмәләрҙе һәр бер колхоз, бригада, звено, һәр бер колхозсы үтәүгә тос көс һалып, быйыл юғары урожай алыуға өлгәшәсәкбеҙ. Социалистик йөкләмәләребеҙҙе уңышлы үтәйәсәкбеҙ!

Йөкләмә Яңауыл районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктарының һәм ауыл хужалығы специалистарының ауыл хужалығы алдынғылары йыйылышында тикшерелде һәм ҡабул ителде

ПАР ҺӨРӨҮ ПЛАНЫ СРОГЫНАН АЛДА ҮТӘЛДЕ

Дмитриевка МТС-ы механизаторҙары яҙғы баҫыу эштәрен юғары агротехник кимәлдә яҡшы сифатлы итеп башҡарҙылар. Коллектив пар һөрөүҙе срогынан алда тамамланы. МТС пар һөрөү планын байтаҡ арттырып үтәне.

Бында Бухарев, Головко, Сердюков, Буравко, Стрельников, Ғәләүетдинов һәм башҡа иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадалары айырыуса яҡшы эшләнеләр. Уларҙың бригадаларына көндәлек нормаларын систематик рәүештә 111 — 123 процентҡа үтәүгә өлгәштеләр.

Х. Әбүзаров.

Юл төҙөү айлығында

Зур ойошҡанлыҡ менән

Илеш районы колхозсылары юл төҙөү айлығында ҙур ойошҡанлыҡ менән эшләйҙәр. Был айлыҡта районда 6 километр эшләнгәндә яңы юл, 38 погонный метр яңы күпер төҙөлдө, 14 километр юлға, 40 погонный метр күперҙәр ремонтланды һәм 40 метр күпергә айырыуса ремонт үткәрелде.

Беҙҙең районда юл төҙөү эшендә өс кенә көн эсендә үк колхозсыларҙан 824 кеше, 196 ат һәм 3 автомашина ҡатнашты. Юл төҙөү мастеры иптәш Хәмитов эшләгән Ярҡәй — Ишкар участкаһында юл эшләре айырыуса ойошҡанлыҡ менән барҙы. Был участкала Ишкар, Маныр, Юҡары Ярҡәй, Исмәү ауылы Советтарынан 390 колхозсы һәм 90 ат ҡатнашты. Улар айлыҡтың тәүге көндә өс километр юл төҙөнөләр һәм бер километр юлға ҡырсын түшәнеләр, 480 кубометр ком һәм таш сығарҙылар. Мастер иптәш Вахитов етәкселек иткән Ғрулевка—Исмәй участкаһында 4 колхоздан 215 колхозсы ҡатнашты. Был участкала ла эштәр яҡшы бара. Бында эшләүселәр 4 колхоздан 215 колхозсы һәм 105 ат ҡатнашты.

Айлыҡтың тәүге көндә ук ҡалған Илеш Советы һәм ВКП(б) район комитеттарының күсмә Ҡыҙыл Байраҡтарын алыу өсөн Исмәй ауыл Советы ярыша.

Ш. Шаймурзин,
Илеш районы юл бүлеге мөдире.

Задание срогынан алда үтәлә

Свердлов исемендәге беҙҙең колхоз юл төҙөү заданиеһын срогынан алда үтәнеләр. Юл төҙөү эшенә колхоз правлениеһы 57 кеше һәм 30 ялыу бүлде. Шул уҡ ваҡытта юл төҙөү етештереүсәнлеге эшләү өсөн тейешле сараларҙы күрҙе. Юл эштәренә бөтә инвентарҙар булдырылды. Эшселәр бригада тураһында ла хәстәрлек күрелде.

Айлыҡтың беренсе көнөндә үк беҙ ойошҡанлыҡ менән эшкә башланыҡ. Беренсе көндә 5 бригада ҡатнашты. Бер эштә бригадалар беренсе ҡарап сыҡты. Айыр иҫәпкә генә беҙҙең бригада ҡаршы бирелде. Һәр бригада 5 кешенән тора. Юл төҙөү мастеры Дмитриев эште сифатлы тикшерҙе, яҡшы тип ҡабул итте.

Беҙ 13 метр оҙонлоғондағы күпергә срогынан алда төҙөнөк. Мрәҡ—Малаҙыҡ трассаһындағы күпер, колхозсылар юл төҙөү заданиеһын срогынан алда төҙөлеүҙән, урожай йыйнауға әҙерлек эштәрен тамамланылар.

А. Николаев,
Күгәрсен районы, Свердлов исемендәге колхоздың юл төҙөүселәре бригадиры.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА

☆ ☆☆ ☆



Ауыр индустрия предприятиелары төҙөү министерствоһы Кисловодскиҙә яңы санаторий төҙөнө. Архитектор Н. С. Полюдовка был санаторийҙең архитектураһы өсөн Сталин премияһы бирелде.

Һүрәттә: санаторийҙең дөйөм күренеше.

Г. Аракельян фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Волга гидроузелын төҙөүселәрҙең ярышы

Куйбышев гидроузелының төҙөләш майҙаны. Куйбышев гидроэлектростанцияһын төҙөүселәрҙең социалистик ярышы көслө булып йәйелә бара.

Уң яҡ ярҙа гидроэлектростанция бинаһы өсөн котлован ҡаҙыла. Ҡеүәтле экскаваторҙар унан 250 мең кубометр ер ҡаҙынылар.

Техниканы файҙаланыуҙа юғары күрһәткестәр өсөн көрәшеүсе алдынғы механизаторҙарҙың сафы үҫә. Эшләп сығарыу нормаһын бер ярымға арттырып үтәүгә өлгәшкән ер ҡаҙыуҙағы ике мастерға — Агишев һәм Тарамбулов иптәштәргә иң яҡшы экскаваторщиктар исеме бирелде.

Һул яҡ ярҙа экскаватор машинисе иптәш Оленин уларҙы ҡыуып етә башланы, уға шулай уҡ төҙөләштең иң яҡшы экскаваторщиге исеме бирелде. Механик завод төҙөләшендә эшләп, ул хеҙмәт етештереүсәнлеген 200 процентҡа күтәрҙе. Хәҙер ул сменаға эшләп сығарыуҙы өсәр нормаға еткерергә тип яңы йөкләмә алды. Уның менән бергә эшләүсе иптәш Чевашев та ошондай йөкләмә алды.

Һул яҡ яр стахановсылары уң яҡ ярҙағы төҙөүселәрҙе машиналарҙың етештереүсәнлеген артабан күтәреү өсөн һәм быйыл төҙөләш-монтаж эштәре планын срогынан алда үтәү өсөн ярышҡа саҡырҙылар.

Саҡырыу ҡабул ителде. Һул яҡ һәм уң яр төҙөүселәре араһында социалистик ярыш договоры төҙәлде, күтәренке яңы йөкләмәләр алынды.

И. А. Бунеевтен эш тәжрибәһен өйрәнеү

СССР Ауыл хужалығы министерствоһы Краснодар крайының Малороссийск МТС-ы трактор бригадаһының бригадиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы И. А. Бунеевтен эш тәжрибәһен киң пропагандалау тураһында ҡарар ҡабул итте.

Бунеев бригадаһы колхоз баҫыуҙарында урожайҙы күтәреүҙең бөтә булған резервтарын уңышлы файҙаланып, отличнo эш өлгөләрен күрһәтә. Трактористар яңы техниканы, алдынғы агрономик алымдарҙы систематик өйрәнәләр, үҙ белемдәрен өҙлөкһөҙ камиллаштыралар. Даими уҡыу арҡаһында бригадала артта ҡалыусы трактористар юҡ. Улар эштең юғары сифатына өлгәшеп, норманы арттырып үтәйҙәр.

Илебеҙ МТС-тарында Бунеев бригадаһының эш тәжрибәһен өйрәнеү буйынса семинарҙар һәм занятиелар ойошторорға ҡарар ителде.

Министерство И. А. Бунеев бригадаһын еңел автомобиль менән бүләкләне.

(ТАСС).

Урожай йыйнау

Таджикстандың көньяҡ райондарының күпселеге һәм Ленинабад өлкәһенең колхоздары урожай йыйнай һәм ашлыҡ һуға башланылар. Комбайнерҙар араһында машиналарҙы юғары етештереүсәнлекле файҙаланыу өсөн ярыш йәйелдерелде. Алдынғы механизаторҙар эштең беренсе көндәренән үк нормаларҙы 1,5 тапҡырға арттырып үтәйҙәр.

Көньяҡ Дағстандың түбәнге райондарында башаҡлы культуралар йыйнау башланды. Дербент районының ҡайһы бер колхоздары көҙгө арпа урожайын йыйнайҙар. Улар йөҙәрләгән бот урожай алалар. Баҫыуҙарға комбайндар сыҡты.

Днепрҙа яңы ҡала

КАХОВКА. Днепр ярындағы яңы ҡала ҡыҙыу темптар менән үҫә. Бында ундарса ағас йорттар һалынды. Төҙөләсәк ҡаланың Көнсығышында ике теплоэлектростанцияны монтажлау тамамланып килә, бетон заводы төҙөлә.

Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡырым каналдарын төҙөүселәр менән социалистик ярышҡа сығып, Каховка ГЭС-ы төҙөләшенең эшселәре һәм специалистары ҙур күтәренкелек менән эшләйҙәр. Ундарса бригадалар һәм йөҙҙәрсә эшселәр яңы күтәренке йөкләмәләр алдылар. Иптәш Борцов етәкселегендәге штукатурсылар бригадаһы смена нормаһын 170 процентҡа үтәй. Бригада йыллыҡ заданиеһе срогынан байтаҡ алда үтәргә йөкләмә алды. Руденко һәм Рязанов иптәштәр етәкселегендәге балта оҫталары бригадалары һәм иптәш Пароменко етәкселегендәге штукатурсылар сменаға бер ярым—икешәр норма эшләйҙәр.

Сталино өлкәһе, Ново-Краматорскийҙең Сталин исемендәге машиналар төҙөү заводы коммунизм төҙөләштәренән заказдар алды. Заводтың бер нисә цехы атлап йөрөүсе экскаваторҙар, лебедкалар, гигант статорҙар әҙерләй.

Һүрәттә: яңы төҙөләштәргә оҙатыу өсөн әҙер лебедкалар.

И. Бондаренко фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Коммунизмдең бөйөк төҙөләштәре өсөн

УГЛИЧ. (Ярославль өлкәһе). Углич механика заводы Волга—Дон каналы төҙөләше өсөн тағы ла бер ер һыуырғыс агрегаты эшләне. Агрегатты йыйнау срогынан алда тәүәлләнде.

Ер һыуырғыс агрегаттарҙан башҡа завод бетон заводтары өсөн металл конструкциялар һәм коммунизм төҙөләштәре өсөн көмдәрҙе һәм ҡырсын таштарҙы айыу әйберҙәре һәм бөйөк төҙөләштәр өсөн башҡа бик күп кенә төҙөләш механизмдәре сығара.

ВКП(б)-ның БАШҠОРТОСТАН ӨЛКӘ КОМИТЕТЕ ПЛЕНУМЫ

Республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйыуға әҙерлек һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете секретаре иптәш С. Ә. ВАҺАПОВТЫҢ докладың)*

Иптәштәр!

Һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡ планды уңышлы үтәп, совет халҡы, большевиктар партияһы һәм бөйөк Сталин етәкселегендә, промышленносте, ауыл хужалығын, фәнде һәм культураны артабан үҫтереүҙе дауам иттерә, беҙҙең илебеҙҙең коммунизмға табан, алға хәрәкәт итеү темптарын тиҙләтә.

Большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте ауыл хужалығы алдына 1951 йылда урожайлылыҡты артабан күтәреү, общественный малсылыҡты үҫтереү һәм бөтә ауыл хужалығының валовой продукцияһын арттырыу буйынса ҙур һәм яуаплы бурыстар ҡуйҙы.

Быйылғы йылдың беренсе кварталында халыҡ хужалығын үҫтереүҙең государство планын үтәүҙең иғлан ителгән йомғаҡтары беҙҙең социалистик ауыл хужалығыбыҙҙың яңы ҡеүәтле күтәрелеш юлында тороуын күрһәтәләр.

Илебеҙҙең колхоздары, МТС-тары һәм совхоздары хәҙерге замандың иң яңы техникаһы менән байыҡтырылып, быйыл ауыл хужалығы эштәрен ойошҡанлыраҡ һәм тағы ла юғарыраҡ кимәлдә башҡаралар.

Партия Үҙәк Комитетенең һәм иптәш Сталиндең ғәйәт ҙур ярҙам күрһәтеүе арҡаһында беҙҙең республикабыҙҙың ауыл хужалығында шулай уҡ ҡайһы бер уңыштарға өлгәшелде. Был уңыштар тураһында без һеҙҙең менән һөйләштек инде, һәм минеңсә, был пленумда улар тураһында тағы ла бер тапҡыр һөйләүҙең кәрәге юҡ.

Әгәр ҙә без ауыл хужалығына етәкселек итеүҙәге ҙур хаталар һәм етешһеҙлектәр тураһында, беҙҙең эшебеҙҙәге хаталар тураһында үҙ-үҙеңде тәнҡитләп һөйләһәк, һәм иғтибарҙы был етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бөтөрөүгә туплаһаҡ, дөрөҫерәк булыр.

Ауыл хужалығы өлкәһендә партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарында күп тапҡырҙар билдәләнелгән төп бурыс бөтә ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын байтаҡ күтәреүҙән, общественный малдар һанын һәм шул уҡ ваҡытта уның продукт биреүсәнлеген йылдам арттырыуҙан тора.

Был төп бурысты уңышлы хәл иткән ваҡытта ғына без илебеҙҙә аҙыҡ-түлек муллығының булыуына, еңел промышленностең сырьё менән тулыһынса тәьмин ителеүенә, государствоның аҙыҡ-түлек һәм сырьё резервтарының етерлек тупланыуына, беҙҙең бөтә колхоздарыбыҙҙың байытылыуына һәм колхозсыларыбыҙҙың мул тормошта йәшәүҙәренә өлгәшә алаҡбыҙ.

Беҙҙең өлкә партия ойошмаһы ауыл хужалығына етәкселек итеүҙәге был төп бурысты нисек үтәй һуң?

1950 йылда республика колхоздары, совхоздары һәм машина-трактор станциялары эшенең йомғаҡтары был бурысты беҙҙең әле ҡәнәғәтләнмәҫлек хәл итеүебеҙҙе күрһәтәләр.

Республикабыҙ колхоздарының һәм совхоздарының яҡшы ерҙәре, етерлек һанда эшсе көсө бар һәм улар беренсе класлы ауыл хужалығы техникаһы менән байыҡтырылғандар. Икенсе төрлө әйткәндә, уларҙа бөтә ауыл хужалығы культураларынан йыл һайын яҡшы урожайҙар алыу, общественный малдар һанын йылдам арттырыу һәм уның продукт биреүсәнлеген байтаҡ күтәреү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар.

Шуға ҡарамаҫтан, республика колхоздары һәм совхоздары ауыл хужалығын үҫтереү темптарында артта ҡалалар һәм күп кенә ваҡыттарҙа государствоның план заданиеларын үтәмәйҙәр. Былтыр күп кенә колхоздар һәм совхоздар урожайлылыҡтың һәм малсылыҡты үҫтереүҙең государство планын үтәмәнеләр. Атап әйткәндә, 25 район урожайҙы планда билдәләнелгәнгә ҡарағанда, түбәнерәк алдылар. Байҡыбаш, Әлшәй, Ҡырмыҫҡалы, Мәләүез, Саҡмағош, Благовар, Бөзәләк, Ҡариҙел райондары һәм башҡа ҡайһы бер райондар айырыуса түбән урожайҙар алдылар. Был райондарҙың түбән урожайҙар алыуы есәп ниндәй ҙә булһа объектив сәбәптәр булмаңы.

Майлы һәм техник культуралар хәҙерге шарттарҙа айырыуса доходлы булһа ла, уларҙың урожайлылығын күтәреү бурысын без ҡәнәғәтләнерлек итеп үтәмәйбеҙ.

Республиканың күп кенә колхоздары һәм совхоздары общественный малдар һанын арттырыу һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү бурысын насар үтәйҙәр. Малдар төрө буйынса план үтәлешен ҡарағанда был айырыуса асыҡ күренә. Матрай, Борай, Байҡыбаш һәм Балтач райондары 1950 йылда общественный малсылыҡты үҫтереүҙең йыллыҡ планын үтәү буйынса айырыуса артта ҡалыусы райондарҙан иҫәпләнәләр.

Унан ары, ауыл хужалығы культураларының урожайлылығының һәм малдарҙың продукт биреүсәнлегенең түбән булыуы арҡаһында республиканың күп кенә колхоздары былтыр аҡса доходтарын арттырыу пландарын үтәмәнеләр. Шуны әйтергә кәрәк, беҙҙә колхоздарҙың аҡса доходтары сиктән тыш түбән, һәм был, колхоздарҙа беҙҙең көрәкле ярҙамсы хужалыҡ тармаҡтарын булдырмауыбыҙ менән аңлатыла.

Бөрө, Дыуан, Туймазы, Оло Теләк, Учалы һәм Белорет райондарының колхоздарында аҡса доходтарының 1950 йылда, 1949 йылға сағыштырғанда, кәмеүе айырыуса ғәфеү ителмәҫлек булып тора.

Беҙҙең күп кенә колхоздарыбыҙ һәм совхоздарыбыҙ былтыр урожайлылыҡтың һәм малсылыҡты үҫтереүҙең государство пландарын ни өсөн үтәмәнеләр һуң?

Колхоздарҙың, МТС-тарҙың һәм совхоздарҙың 1950 йылдағы эшенә яһалған анализ ауыл хужалығында булған производство мөмкинлектәрен һәм бигерәк тә техниканы ҡәнәғәтләнерлек файҙаланмауыбыҙҙы күрһәтә. Тап бына ошо, колхоздарға, МТС-тарға һәм совхоздарға беҙҙең етәкселегебеҙҙәге ҙур етешһеҙлектәрҙең береһе булып тора.

Тракторҙарҙы һәм комбайндарҙы файҙаланыу тураһында ҡайһы бер мәғлүмәттәр килтерәм. МТС-тарҙың ике сменала эшләү өсөн трактористар менән комплектовать ителмәүе, тракторҙарҙың һәм комбайндарҙың техник торошоноң насар булыуы, шулай уҡ уларҙы файҙаланыуҙы ойоштороуҙа сериҙ етешһеҙлектәр булыу һөҙөмтәһендә былтыр һәр бер шартлы тракторға тәүлек әйләнәһенә етештереү нормала ҡаралған 7,6 гектар урынына, ни бары 2,8 гектар ғына, ә шартлы комбайнға көндәлек етештереү нормала ҡаралған 11 гектар урынына 5,2 гектар тәшкил итте.

Тракторҙарҙы һәм комбайндарҙы насар файҙаланыу машина-трактор станцияларының трактор эштәре планын үтәмәүҙәренә, һәр бер шартлы тракторға, 1949 йылға ҡарағанда, 21 гектарға аҙыраҡ эшләүҙәренә, сәсеү сроктарын, пар һөрөүҙе, урожай йыйнауҙы, туңға һөрөүҙе һәм колхоздарҙа башҡа ауыл хужалығы эштәрен һуҙыуға килтерҙе. Мәҫәлән, комбайндар менән урожай йыйнау буйынса задание билдәләнелгән срокта тик 61,4 процентҡа ғына һәм тракторҙар менән туңға һөрөү планы 59 процентҡа ғына үтәлде.

Иглин, Ғафури, Покровка, Ҡырмыҫҡалы, Стәрлебаш һәм Федоровка райондары ауыл хужалығында техниканы айырыуса насар файҙаланалар. Покровка районында шартлы тракторға сменала уртаса эшләп сығарыу 1950 йылда бер гектар, Иглин районында — 1,2 гектар һәм Ғафури районында — 1,01 гектар тәшкил итте. Колхоздарға ярҙамға партия һәм хөкүмәт тарафынан ошондай күп һанда бирелгән техниканы файҙаланыуға тағы ла насарыраҡ мөнәсәбәт итеүҙең булыуы мөмкин түгел. Трактор паркын файҙаланыуҙағы бындай хәл был МТС-тарҙың һәм әйтеп үтелгән район етәкселәренең ошо ҙур техниканы файҙаланыуға һәләтһеҙ булыуҙары йәки теләмәүҙәре менән аңлатыла.

Шуныһы асыҡ, әйтеп үтелгән райондарҙың партия райкомдары һәм район Советы исполкомдары МТС эшендәге тәртипһеҙлек менән килешеп йәшәйҙәр һәм ауыл хужалығында техниканы файҙаланыуҙы яҡшыртыу тураһында тейешле хәстәрлек күрмәйҙәр. Трактор паркын файҙаланыуҙың ошондай хурлыҡлы түбән күрһәткестәрен тик ошоноң менән генә аңлатырға мөмкин.

Докладымдың башында мин, колхоздарҙа общественный хужалыҡтағы бөтә эштәрҙе үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үтәү өсөн эшсе көсө етерлек, тигәйнем. Эшсе көстө дөрөҫ файҙаланыу колхоз производствоһының бөтә тармаҡтарын уңышлы үҫтереү эшендә хәл итеүсе факторҙарҙың береһе булып тора. Үкенескә ҡаршы, республиканың күп кенә колхоздарында хеҙмәткә һәләтле колхозсыларҙың бик күбеһе йылдан-йылға хеҙмәт көндәренең билдәләнелгән минимумын үтәмәй, йәки колхоз производствоһының шарттары буйынса талап ителгәнгә ҡарағанда хеҙмәт көндәрен байтаҡ кәмерәк эшләйҙәр.

Ғафури, Маҡар, Саҡмағош, Нуриман, Федоровка, Ҡырмыҫҡалы һәм Ауырғазы райондары колхоздарында эшсе көсө бигерәк тә насар файҙаланыла.

Алдынғы колхоздарҙың һәм райондарҙың тәжрибәһе беҙҙә эшләп алынған хеҙмәт көндәренең колхоз хужалығында бөтә эштәрҙе үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үтәү өсөн етерлек булмауын күрһәтә. Бында беҙҙең файҙаланылмаған бик ҙур резервтарыбыҙ бар. Без хеҙмәт көндәре эшләп алыуҙы уртаса район буйынса ғына түгел, ә һәр бер колхозсының да бик ныҡ арттырыуына өлгәшеү бурысын ҡуйырға тейешбеҙ, һәм был һис шикһеҙ, колхоздарҙың экономикаларын күтәреүгә лә, шулай уҡ, колхозсыларҙың үҙҙәренең тормоштарын яҡшыртыуға ла ыңғай тәьҫир итер.

Унан ары, ауыл хужалығы эштәрен уңышлы үтәү колхоз производствоһында йәнле тартыу көсөн дөрөҫ файҙаланыуға бик ныҡ бәйләнгән. Шул уҡ ваҡытта республиканың ҡайһы бер райондарында был турала хәстәрлек күреүҙән туҡтағандар. Быйылғы йылдың яҙғы ауыл хужалығы эштәрен үткәреү практикаһынан бер миҫал килтерәм. Көйөргәҙе районы ат һабандары менән яҙ кенә 3565 гектар ер һөрөргә һәм ат сәскестәре менән 12400 гектар сәсергә тейеш ине. Фактик алғанда ат һабандары менән 719 гектар, йәки планда билдәләнелгәнгә ҡарағанда 20 процент кенә ер һөрөлгән һәм ат сәскестәре менән 9236 гектар, йәки планға ҡарағанда 74,5 процент кенә сәселгән.

Был районда ауыл хужалығы эштәренең бөтә күләмен МТС, йәғни государство өлкәһенә аударырға маташалар, ә колхоздарҙың үҙҙәренең производство мөмкинлектәрен файҙаланыу тураһында уйлауҙан туҡтағандар. Бындай практиканың колхоздарға һәм государствоға ҙур зарар килтереүен аңлауы ҡыйын түгел.

Колхоз һәм совхоз хужалығының бөтә тармаҡтарында беҙ юл ҡуйған ҙур юғалтыуҙарға айырыуса туҡталып үтергә кәрәк. Урожайҙы үҙ ваҡытында һәм сифатлы йыйнап алмау һөҙөмтәһендә республика колхоздары йыл һайын бик күп һанда иген, майлы, техник культуралар, картоф, йәшелсә, бесән, һалам һәм башҡаларҙы юғалталар.

Малдарҙың үлеүенән һәм колхоздарҙың эске ихтыяжларына тип, уларҙы төрлө ергә тотоноуҙан малсылыҡта ла беҙҙең юғалтыуҙарыбыҙ бик ҙур. Ҡалтасы, Баҡалы, Яңауыл, Благовещен һәм Оло Теләк райондары малсылыҡты айырыуса күп юғалтыуҙарға юл ҡуялар.

Колхоздарға, совхоздарға һәм МТС-тарға етәкселек итеүҙәге ҙур етешһеҙлектәр республика ауыл хужалығындағы төп бурысты ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәүҙең төп сәбәбе булып тора. Без эштәге был етешһеҙлектәрҙе ни тиклем тиҙерәк бөтөрһәк, ауыл хужалығы производствоһының бөтә тармаҡтарын колхоздарҙың һәм совхоздарҙың экономикаһын үҫтереү шул тиклем уңышлыраҡ барасаҡ.

1951 йылғы яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары

ССР Союзы Министрҙар Советы урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарынан яҙғы ауыл хужалығы эштәрен ойошҡан рәүештә үткәреүҙе, яҙғы сәсеүҙә бөтә материаль-техник һәм хеҙмәт ресурстарын тулыһынса һәм дөрөҫ файҙаланыуҙы, фән өлгәшеүҙәрен һәм алдынғы тәжрибәләрҙе колхоздар, совхоздар һәм машина-трактор станциялары производствоһына киң индереүҙе тәьмин итеүҙе талап иткәйне.

5 июнгә колхоздарҙа яровой культуралар, үткән йылға ҡарағанда, 294,9 мең гектарға, шул иҫәптән бойҙай 145,6 гектарға күберәк сәселде. Бойҙай сәсеүҙең государство планы арттырып үтәлде. «Зернотрест», «Молсвиноводтрест» һәм башҡа ведомстволарҙың совхоздары шулай уҡ сәсеү планын арттырып үтәнеләр.

Һуңғы культураларҙы сәсеү күп кенә райондарҙа әле һаман дауам итә. Асҡын, Оло Теләк, Бөзәләк, Ҡариҙел, Иглин, Мәсетле, Байҡыбаш, Бәләбәй, Покровка һәм башҡа ҡайһы бер райондар сәсеүҙе ошо көнгә тиклем тамамламағандар әле.

Үҙ ваҡытында орлоҡ тураһында хәстәрлек күрмәү был райондарҙың артта ҡалыу сәбәптәренең береһе булып тора. Мәсетле районында, мәҫәлән, сәсеү орлоҡтарын һаҡлау тейешенсә ойошторолманы. Шуға күрә сәсеүгә тәшкәс орлоҡтарҙың ҡайһы бер өлөшө ярамһыҙ булып сыҡты. Асҡын районының етәкселәре колхоздарҙа һатып алыу һәм алмашыу юлы менән орлоҡ фондын тулыландырыу эшен ойошторманылар һәм сәсеү алдынан, шулай уҡ, сәсеү орлоҡтарының етешмәүе факты алдында ҡалдылар.

Ҡайһы бер райондар агротехник сроктарҙы боҙоп, яҙғы сәсеүҙе һуҙҙылар.

Краснокам, Ҡырмыҫҡалы, Благовещен, Асҡын, Байҡыбаш, Оло Теләк, Белоҡатай, Мәләүез, Мәсетле, Көйөргәҙе, Дыуан, Кушнаренко райондары сәсеү эштәрен айырыуса аҡрын алып барҙылар, башаҡлы культуралар сәсеүҙе һуҙҙылар һәм уларҙың байтаҡ өлөшөн бик һуңлап сәстеләр.

Трактор паркын ҡәнәғәтләнерлек файҙаланмау иртә культуралар сәсеүҙе һуҙыуҙың төп сәбәбе булып тора. Ошо йылдың 1 июненә республика МТС-тары буйынса шартлы тракторға йомшаҡ һөрөүгә күсергәндә ни бары 159 гектар ғына, йәки сменаға нормала ҡаралған 3,8 гектар урынына 2 гектар ғына ер эшкәртелгән. Ошо уҡ датаға тракторҙарҙың буш тороуы 600 мең сәғәт йәки дөйөм ваҡытҡа ҡарағанда 13,5 процент, шул иҫәптән техник төҙәк булмауҙар буйынса буш тороуҙар һаны 386 мең сәғәт, йәки буш тороуҙарҙың дөйөм һанының 64 процентын тәшкил итте.

Артта ҡалыусы машина-трактор станцияларында трактор паркын файҙаланыу тағы ла насарыраҡ. Мәҫәлән, Охлебинин һәм Ҡалмыҡ МТС-тарында шартлы тракторға ер эшкәртеү 104 гектар йәки сменаға 1,3 гектар, Пугачев МТС-ында — 136 гектар, йәки сменаға 1,7 гектар һәм Оло Теләк МТС-ында — 99 гектар, йәки сменаға 1,23 гектар тәшкил итте. Үкенескә ҡаршы, бындай машина-трактор станциялары беҙҙә аҙ түгел.

Шул уҡ ваҡытта, алдынғы МТС-тар, трактор бригадалары һәм трактористар яҙғы баҫыу эштәрендә трактор паркын юғары етештереүсәнлекле файҙаланыуҙың өлгөлө миҫалдарын күрһәтәләр. Приют МТС-ы яҙғы баҫыу эштәре планын ошо йылдың 20 майына уҡ 103 процентҡа үтәне һәм шартлы тракторға 200 гектар, йәки республика буйынсаҡыға ҡарағанда, 69 гектарға күберәк ер эшкәртте. Ошо МТС-тың иптәш Ғәбәйҙуллин етәкселек иткән трактор бригадаһы шартлы тракторға 20 майға 359 гектар ер эшкәртте, яҙғы эштәр планын 175 процентҡа үтәне һәм 5 тоннанан артығыраҡ яғыулыҡҡа экономия яһаны. Колхоздарҙа бөтә эштәрҙе лә үҙ ваҡытында һәм яҡшы сифатлы итеп үткәрҙе.

Общественный малсылыҡ өсөн мал аҙығы етештереү эшендә республиканың күп кенә колхоздарының һәм совхоздарының сериҙ артта ҡалыуын иҫәпкә алып, без мал аҙығы культураларын сәсеү планын үтәүгә айырыуса иғтибар бирергә тейеш инек.

5 июнгә колхоздар бер йыллыҡ үләндәр сәсеү планын 142,1 процентҡа, тамыр аҙыҡтары — 102,1 процентҡа, силос культуралары — 115,7 процентҡа һәм күп йыллыҡ үләндәр сәсеү планын 61,6 процентҡа үтәнеләр. Колхоздарҙа күп йыллыҡ үлән орлоҡтарын үҫтереүҙәге тәртипһеҙлек быйыл был үләндәрҙе сәсеүҙе үтәмәүгә килтерҙе, колхоздарҙа был үләндәргә мохтажлыҡ йылдан-йыл арта бара.

Мал аҙыҡтарының етешмәүенә ҡарамаҫтан, күп кенә райондарҙың партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының етәкселәре колхоздарҙа уларҙы етештереүҙе арттырыу эшенә яуапһыҙ ҡарауҙы дауам иттерәләр. Байҡыбаш, Покровка, Маҡар, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй, Борай, Мишкә, Абзан, Күгәрсен һәм Хәйбулла райондары кеүек райондар, гәрсә уларҙың колхоздары тамыр аҙыҡтарын сәсеү өсөн орлоҡтарҙы «Сортсемовощтең» теләһә ниндәй бүлегенән һәм сельпонан һатып ала алһалар ҙа, тамыр аҙыҡтар сәсеү планын үтәмәнеләр.

Билдәле булыуынса, беҙҙә ер байлыҡтары нигеҙҙә үҙләштерелгәндәр һәм әле күптән түгел булған кеүек «буш торған» майҙандар юҡ. Хәҙер беҙгә ерҙең уңдырышлылығын күтәреү өҫтөндә сериҙ эшләргә, шул уҡ майҙандан урожайҙы максималь алырға кәрәк. Был өлкәлә болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса саралар мөһим әһәмиәткә эйә булып торалар. Шуға ҡарамаҫтан күп кенә райондарҙа был сараларҙы үткәреүҙә бөтөнләйгә сыҙап торғоһоҙ хәл барлыҡҡа килгән.

1 июнгә тиклем Баҡалы, Абзан, Балтач, Көйөргәҙе, Матрай, Борай, Бөрө, Салауат, Стәрлебаш райондарының колхоздары был эшкә башламағайнылар әле. Бындай хәлде тик колхоздарҙа мал аҙығын етештереүҙе арттырыу эшенә партия райкомдарының, район Советы исполкомдарының, район ауыл хужалығы бүлектәренең һәм МТС-тарҙың ғәмһеҙ ҡарашы менән генә аңлатырға мөмкин. Бында башҡа сәбәптәр юҡ.

Машина-трактор станцияларына колхоздарҙа болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса эш планы 11 мең гектар күләмендә билдәләнелгән, ә улар был эште тик 666 гектар майҙанда ғына башҡарҙылар.

Партия өлкә Комитетенең пленумы Нәбиуллин һәм Комаров иптәштәрҙән, государствоның был мөһим заданиеһен МТС директорҙарының үтәүен һеҙ ни өсөн ошолай насар ойоштораһығыҙ һәм бындай әҙәклек өсөн ғәйеплеләрҙән нинә бер нәмә лә талап итмәйһегеҙ, тип һорарға хаҡлы.

Быйыл күп кенә колхоздар юғары ҡиммәтле техник культураларҙы, бигерәк тә оҙон сүсле етен һәм тарма сәсеүҙе ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәнеләр. Республика буйынса, тотош алғанда, оҙон сүсле етен сәсеү планы ни бары 33,4 процентҡа һәм тарма сәсеү планы 88,6 процентҡа ғына үтәлгән. Ошо юғары ла әйтелгән культураларҙы сәсеп еткермәү, башлыса, Белоҡатай, Ҡыйғы, Покровка, Байҡыбаш, Мәсетле, Бүздәк райондарына тәшә.

Колхоз хужалығында был культураларҙың доходлы булыуын ошондай миҫалдарҙан күрергә мөмкин. Баҡалы районының Карл Маркс исемендәге колхозы 1950 йылда бөтәһе 1 миллион 093 мең һум доход алды, уның 303 мең һумы тарма иҫәбенә алынды. Бәләбәй районының Чапаев исемендәге колхозы 634 мең һум доход алды, уның 424 мең һумы тарма иҫәбенә тура килә. Дыуан районының «Уларсы» колхозы 304 мең һум суммала доход алды, уның 84 мең һумы етен иҫәбенә тура килә. Шул уҡ районның Молотов исемендәге колхозында 194 мең һумлыҡ алынған доходтың 30 мең һумы етен иҫәбенә тура килә.

Оҙон сүсле етен, тарма сәсеүлегенең һәр бер гектарын өлгөлө тәрбиәләүҙе ойоштороу һәм орлоҡтан булһын, шулай уҡ сүстән юғары урожай алыуҙы тәьмин итергә кәрәк.

Государство планы буйынса без быйыл 32700 гектар майҙанда, шул иҫәптән колхоздарҙа 14 мең гектар һәм совхоздарҙа 1385 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ултыртырға; колхоздарҙа 10 мең гектар һәм совхоздарҙа 1390 гектар майҙанда элек ултыртылаған урман полосаларын тулыландырыуҙы һәм аяҡҡа баҫтырыуҙы үткәрергә тейешбеҙ. Шуны танырға кәрәк, республика колхоздары һәм совхоздары быйыл ағас ултыртыу эштәрен, элекке йылдарға ҡарағанда, насарыраҡ алып барҙылар. Ошо йылдың 25 майына республикала ни бары 29486 гектар ғына баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ултыртылды, йәки дөйөм пландың 90 проценты ғына, шул иҫәптән колхоздарҙа 77,3 процент кенә үтәлде. Ә без ағас ултыртыуҙың йыллыҡ планын яҙғы осорҙа үтәргә тейеш инек.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосалары айырыуса кәрәкле булған райондар был эште бигерәк тә ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәнеләр. Атап әйткәндә, Әлшәй районы ағас ултыртыу планын ни бары 51 процентҡа, Бәләбәй — 40 процентҡа, Көйөргәҙе — 60 процентҡа, Мәләүез — 57 процентҡа, Дәүләкән — 53 процентҡа һәм Миәкә районы — 68 процентҡа ғына үтәне.

Республиканың күп кенә колхоздарында һәм совхоздарында элек ултыртылған урман полосалары сыҙап торғоһоҙ насар хәлдә тотолалар, уларҙы тәрбиәләү насар ойошторолған. Мәҫәлән, Абзан районында урман полосаларын тулыландырыу һәм аяҡҡа баҫтырыу планы ни бары 9 процентҡа, Кушнаренко районында — 15 процентҡа, Стәрлетамаҡ районында — 19 процентҡа һәм Көйөргәҙе районында — 10 процентҡа ғына үтәлгән. Ҡайһы бер колхоздарҙа төҙөлгән ағас ултыртыу звенолары таралған йәки икенсе эштә файҙаланылалар. Машина-трактор станциялары йыш ҡына урман полосаларын механизмдар менән эшкәртеү буйынса заданиеларҙы үтәмәйҙәр.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосаһын ултыртыу эшенә партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары иғтибарының ошолай йомшарыуы ағастарҙың бик күп һәләк булыуына һәм колхоздарға һәм государствоға ҙур зарар килтереүе мөмкин булыуын аңлауы ҡыйын түгел.

Фән өлгәшеүҙәрен һәм алдынғы тәжрибәне колхоздар, совхоздар һәм машина-трактор станциялары производствоһына киң индереү ауыл хужалығы эштәрен үткәреүгә етәкселек итеүҙә беҙҙең иң сериҙ бурысыбыҙ булып тора. Был юнәлештә практикала без нәмә эшләнек һуң? Туранан-тура әйтергә тейешмен, әле бик аҙ эшләнгән.

Ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын күтәреү буйынса бөтә агротехник сараларҙан без планды тик ҡар һәм ҡар һыуҙарын тотоу, уңымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм яровой ашлыҡтарҙы арҡыры-буй сәсеү буйынса ғына үтәнек. Шул уҡ ваҡытта был республика буйынса алынған уртаса мәғлүмәттәр булып тора, ә күп кенә райондарҙа ошо саралар ҙа үтәлмәгән.

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа күп кенә мөһим агротехник саралар ҡәнәғәтләнерлек үтәлмәйҙәр. Айырым алғанда, колхоздар урындағы һәм минераль ашламалар индереү, көҙгө ашлыҡтарҙы тырматыу, күп йыллыҡ үлән орлоҡтарының сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу, гранулы ашламалар индереү буйынса пландарҙы үтәмәнеләр. Был республиканың партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының игенселек культураларын күтәреү өсөн йомшаҡ көрәшеүҙәрен, иҫкесә эшләүҙәрен һәм ауыл хужалығында алдынғы агротехник алымдарҙы индереү буйынса кәрәкле ойошторолоусанлыҡ эшен алып бармауҙарын күрһәтә.

Архангель районы был өлкәлә характерле булып тора. Район колхоздары ҡар тотоу, тиреҫ сығарыу, көл йыйнау һәм файҙаланыу, минераль ашламалар алыу, уңымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу, шулай уҡ күп йыллыҡ үлән орлоҡтарының сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу буйынса пландарҙы үтәмәнеләр. Шул уҡ ваҡытта был ошо йыл өсөн генә характерле булып тормай. Архангель районында бөтә агротехник саралар йыл һайын үтәлмәй килә.

Билдәле булыуынса, республика Ауыл хужалығы министерствоһы эргәһендә ауыл хужалығы пропаганда управлениеһы төҙөлгән, уға Министр урынбаҫары иптәш Ғәйсин етәкселек итә. Управлениеға колхоз производствоһына фән өлгәшеүҙәрен һәм алдынғы тәжрибәне индереү эшендә үҙен күрһәтеү өсөн етерлек ваҡыт уҙып инде. Ләкин ул колхоз производствоһынан бик алыҫ тора әле һәм ауыл хужалығына агротехниканың алдынғы алымдарын индереү буйынса эште һүлпән алып бара.

Республика колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары ҡыҫҡаса бына шундай. Был йомғаҡтарҙан ниндәй һығымталар яһарға кәрәк һуң?

Баһаһеҙ, быйыл яҙғы сәсеүҙе без республика колхоздарында, совхоздарында һәм машина-трактор станцияларында булған производство мөмкинлектәренән бик күп түбән үткәрҙек.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшен өлгөлө үткәрергә

Яҙғы сәсеү ауыл хужалығында төп бурысты — бөтә ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын күтәреү бурысын хәл итеү өсөн көрәштә беренсе этап булып тора. Һәм был ысынлап та шулай. Юғары урожай алыу өсөн сәсеүлектәрҙе яҡшы тәрбиәләүҙе ойошторорға, бөтә ауыл хужалығы культураларын үҙ ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйнап алыуҙы һәм урожайҙы һаҡлауҙы тәьмин итергә кәрәк.

Быйыл һауа торошо яҡшы. Республиканың бөтә зоналарында ла етерлек һанда ямғырҙар яуҙы. Көҙгө һәм яҙғы ашлыҡтарҙың үҫеүе нормаль бара. Шул уҡ ваҡытта сәсеүлектәрҙә, бигерәк тә яҙ һөрөлгән ерҙәрҙә ҡый үләндәре лә йылдам үҫәләр.

Был шарттарҙа юғары урожай алыу өсөн сәсеүлектәрҙе өлгөлө тәрбиәләү ойошторолорға тейеш. Колхоздарҙың, совхоздарҙың, МТС-тарҙың һәм райондарҙың хәстәрле етәкселәре килеп тыуған хәлде аңлайҙар, бөтә көстәрҙе һәм средстволарҙы сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе үҙ ваҡытында үткәреүгә мобилизовать итәләр. Ләкин беҙҙә хәстәрлекһеҙ һәм көс һалмайынса яҡшы урожай алыуға иҫәп тотоусы колхоз, совхоз һәм район етәкселәре лә бар әле. Улар, ямғырҙар яуғас, урожай һис шикһеҙ булыр, тип уйлайҙар һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр. Был бик ҡурҡыныслы настроение. Ошолай итеп уйлаусы работниктарҙы без бик ҡаты тәнҡитләргә һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә хәстәрлекһеҙ ҡараған өсөн яза бирергә тейешбеҙ.

Сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән утауҙы һис кисекмәҫтән йәйелдерергә һәм был эшкә хеҙмәткә һәләтле булған колхозсыларҙы һәм совхоз эшселәрен етерлек һанда бүлергә кәрәк. Утауҙа индивидуаль сдельщинаны киң күләмдәрҙә ҡулланырға, элекке йылдарҙа булған кеүек, бында төркөмләп эшләүгә юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Утауҙың сифатына сериҙ иғтибар бирергә кәрәк. Беҙҙә йыш ҡына ошондай факттарҙы күрергә мөмкин, сводка буйынса сәсеүлектәр уталған булып иҫәпләнәләр, ә ҡый үләндәре уларҙа бик ныҡ үҫеүҙә дауам итәләр. Был бигерәк тә былтыр Ҡырмыҫҡалы, Салауат, Йылайыр, Матрай, Стәрлебаш, Саҡмағош райондарында таралғайны.

Үткән йылдарҙа республиканың күп кенә колхоздары көнбағыш, шәкәр сөгөлдөрө, күк һағыҙ, етен, тарма, рыжик һәм горчица сәсеүлектәрен тәрбиәләүҙе бик насар үткәрҙеләр. Райондарҙың етәкселәре быныҡ менән килешеп йәшәнеләр һәм ҡый үләндәренән был культуралар сәсеүлектәренең һәләк булыуына иғтибар бирмәнеләр. Пропаш культураларҙы эшкәртеү өсөн звенолар төҙөлмәне, ә бындай звенолар булған колхоздарҙа улар таралдылар.

Был етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алып, беҙ быйыл пропаш һәм техник культураларҙың сәсеүлектәрен тәрбиәләүгә яуапһыҙ ҡарауҙы бөтөрергә, кәрәк булған урында пропаш культураларҙы эшкәртеү буйынса звенолар төҙөргә, уларҙы нығытырға һәм урынлы файҙаланырға тейешбеҙ. Пропаш культураларҙы һирәгәйтеүҙе һәм рәт араларын эшкәртеүҙе, шулай уҡ ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы үҙ ваҡытында үткәрергә кәрәк.

Сельхозснаб складтарында 5 мең тоннанан артығыраҡ минераль ашлама бар. Был беҙгә талап ителгән һанға сағыштырғанда бик аҙ, ә колхоздар уларҙы һатып алмайҙар. Был ашламаларҙы һатып алыуҙы ойошторорға һәм 15 июндән дә һуңламайынса уларҙы колхоздарға ташып бөтөрөргә кәрәк.

МТС-тарҙың, совхоздарҙың трактор культиваторҙарын һәм колхоздарҙың ат культиваторҙарын пропаш культураларҙың рәт араларын эшкәртеүҙә тулыһынса һәм юғары етештереүсәнлекле файҙаланыуға без айырыуса иғтибар бирергә тейешбеҙ. Республиканың Ауыл хужалығы министерствоһы һәм совхоздар тресты трактор культиваторҙарын файҙаланыуға систематик контроль урынлаштырырға һәм пропаш культураларҙың рәт араларын механизацияланған эшкәтеү планын һәр бер МТС-тың һәм һәр бер совхоздың үҙ ваҡытында үтәүен тәьмин итергә бурыслылар.

Орлоҡ участкаларында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү буйынса эштәрҙең бөтә комплексен үтәү тураһында бигерәк тә хәстәрлек күрергә кәрәк. Быйылдан башлап, без һәр бер колхоздың үҙен үҙ орлоҡтары менән тәьмин итеүе тураһындағы мәсьәләне ҡуйырға тейеш түгелбеҙ, хәҙер был ғына аҙ инде һәм ул үтелгән этап. Беҙгә һәр бер колхоздың һәм совхоздың киләһе йылда сәсеүҙе тотороҡло, алдағы йыл өсөн дә яраҡлы быйылғы йылда әҙерләнгән орлоҡтар менән үткәреү һәм үҙҙәрен тәбиғәттең бөтә осраҡлы хәленән страховать итеү өсөн талап ителгән күләмдән, иң кәмендә, бер ярым, ике тапҡырға артығыраҡ күләмдә орлоҡ менән үҙ-үҙен тәьмин итеүенә өлгәшергә кәрәк.

Орлоҡтар тураһындағы мәсьәләләр буйынса быйылғы һабаҡтарҙан бигерәк тә Асҡын, Бөзәләк, Байҡыбаш, Оло Теләк, Архангель, Благовещен, Ҡариҙел һәм Мәсетле райондарының етәкселәре үҙҙәре өсөн кәрәкле һығымта яһарҙар, тип уйларға кәрәк.

(Азағы 3-сө биттә).

*) Доклад ҡыҫҡартылып алынды.

ВКП(б)-ның БАШҠОРТОСТАН ӨЛКӘ КОМИТЕТЕ ПЛЕНУМЫ

Республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғактары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерлек һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә Комитете секретаре иптәш С. Ә. ВАҺАПОВТЫҢ доклады

Общественный малсылык өсөн аҙык базаһы булдырырға

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

Бесән сабыуҙы һәм мал аҙыҡтарын силослауҙы әгәлә үткәреү колхоздарҙың һәм совхоздарҙың бик яуаплы һәм мөһим бурысы булып тора. Үткән йыл күп кенә райондар бесән йыйнауға һәм мал аҙығын силослауға насар әҙерләнделәр, был эштәрҙе һуңлап башҡарҙылар һәм бесән әҙерләү, силос һалыу пландарын үтәп еткермәнеләр.

Республиканың Ауыл хужалығы министерствоһы бесән әҙерләү һәм мал аҙыҡтарын силослау буйынса колхоздар алдындағы договор йөкләмәләрен үтәүҙе машина-трактор станцияларына ныҡлы талап ҡуймаңы. Күп МТС-тар бесән әҙерләүгә әҙерлекһеҙ килделәр һәм трактор менән бесән сабыу һәм силослау пландарын үтәмәнеләр. Машина-трактор станциялары бесән өйөү, кәбәнгә һалыу, силослау ҡоролмаларын әҙерләү һәм йәшел массаны әҙерләү кеүек эштәрҙе бөтөнләй тиерлек башҡармаңылар. Республиканың ҡайһы бер районларында силос һалыу өсөн көнбағыш сәсеүлектәре һәм шәкәр сөгөлдөрөнөң япраҡтары файҙаланылманы.

Был һабаҡтарға ҡарамаҫтан, күп райондарҙың партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары үткән йылғы хаталарҙы иҫкә алманылар, уларҙы быйыл да ҡабатлайҙар. 1 июнгә колхоздарҙа бесән йыйнау машиналарының 72,4 проценте генә ремонтланған. Машиналарҙы ремонтлау Асҡын, Байҡыбаш, Кушнаренко, Мәләүез һәм Стәрлетамаҡ райондарында айырыуса насар бара, уларҙа бесән сапҡыс машиналарҙың яртыһынан аҙырағы ғына ремонтланған. Бесән йыйнау инвентарҙарен ремонтлау машина-трактор станцияларында тағы ла насарыраҡ тора. Улар 1 июнгә бесән сапҡыс машиналарының 66.6 процентен генә ремонтлағандар. Ошо көнгә тиклем күп колхоздар силослау ҡоролмаларының яңыларын төҙәү һәм иҫкеләрен ремонтлауға башламағандар. Сельхозснаб складтарында 1000-дән артыҡ бесән сапҡыс һәм силос ҡырҡҡыс машиналар ята, колхоздар уларҙы бик аҙырын алалар.

Күрәтегеҙҙә, республикала мал аҙығы әҙерләү эше сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәҫлек бара. Беҙ бөртөклө ашлыҡтарҙы урып-йыйнау башланғанға тиклем бесән йыйнауҙы тамамларға һәм кәмендә йыллыҡ пландың 90 проценте күләмендә силос һалырға тейешбеҙ. Быны иҫкә алып, иң яҡын көндәрҙә бөтә бесән йыйнау машиналарын, силос ҡырҡҡыстарҙы, силослау ҡоролмаларын ремонтлауҙы һәм Сельхозснаб һәм Совхозснаб складтарынан машиналарҙы алыуҙы тамамларға кәрәк. Ремонтланған машиналар һәм силослау ҡоролмалары райисполком, МТС вәкилдәре, колхоз председателдәре һәм бригадирҙәре составындағы комиссия тарафынан мотлаҡ ҡабул итеп алынырға тейеш.

Һәр бер колхозда һәм совхозда бесән йыйнау һәм силос һалыу буйынса эш пландары төҙәүҙе, шулай уҡ мал аҙығы әҙерләү, баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларына бесән сабыу участкаларын натурала акт менән беркетеүҙе һис кисекмәҫтән тамамларға кәрәк.

Республиканың Министрҙар Советы райондарға үләндәрҙе бесән өсөн икенсе тапҡыр сабыу заданиеларен раҫланы. Беҙ был заданиеларҙе минималь һәм һәр бер район тарафынан башҡарылырлыҡ тип иҫәпләйбеҙ.

Бесән сабыуҙы һәм мал аҙығын силослауҙы уңышлы үткәреүҙә хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуҙың һәм был эштәрҙә механизацияларҙың бөтә средстволарын юғары етештереүсәнлекле файҙаланыуҙың хәл иткес әһәмиәте бар. Бесән йыйнау һәм силос һалыу эштәрендә колхозсыларҙың һәм совхоз эшселәренең тулыһынса ҡатнашыуын тәьмин итергә, мал аҙығы әҙерләүҙә ҡатнашыусы бөтә колхозсыларҙың һәм совхоз эшселәренең көндәлек эш нормаларын үтәүҙәренә һәм арттырып үтәүҙәренә өлгәшергә кәрәк. Колхоздарҙа һәм машина-трактор станцияларында мал аҙығы әҙерләүҙә ҡатнашыусы колхозсыларҙы, трактористорҙы һәм МТС шоферҙарын дәртләндереү буйынса СССР Министрҙар Советы тарафынан тәҡдим ителгән һәм билдәләнгән сараларҙы ваҡытында һәм дөрөҫ ҡулланыуға айырыуса иғтибар бирергә кәрәк.

Урожай йыйнау—ауыл хужалығы эштәренең иң яуаплы осоро

Урожай йыйнау эше хаҡлы рәүештә ауыл хужалығында иң яуаплы һәм иң кәҫергәнешле осор тип иҫәпләнә. Яҡшы урожай үҫтерергә мөмкин, ләкин уны насар йыйнау ҙур юғалтыуға алып килә. Үткән йыл республиканың ҡайһы бер колхоздарында һәм совхоздарында быны шулай булды ла.

Ашлыҡтарҙың өлгөрөү барышына ҡарағанда арышты урып-йыйнау көньяҡ, көнбайыш һәм Урал арты районларында үткән йылдарға ҡарағанда иртәрәк башланасаҡ. Тимәк, урып-йыйнау эштәрен йәйелдереүгә тиклем ни бары бер ай самаһы ваҡыт ҡалды. Шуға ҡарамаҫтан, күпселек райондарҙа урожай йыйнауға әҙерлек ҡәнәғәтләнмәҫлек һәм аҡрын бара.

Республиканың машина-трактор станцияларында урып-йыйнауға әҙерлектең барышын ҡарайыҡ. Улар быйыл бөртөклө ашлыҡ культуралары дөйөм майҙанының 54 процентен һәм 100 мең гектар башҡа культураларҙы комбайн менән урып-йыйырға тейештәр.

5 июнгә МТС-тар комбайндарҙы ремонтлау планын 43,8 процентҡа йәки үткән йылға ҡарағанда 6,4 процентҡа кәмерәк үтәгәндәр. Айырыуса Мәсем, Покровка, Архангель, Ергән, Һарыҡул, Забельский, Миәкә, Ерекле, Үсен-Ивановск, Бәрә, Мишкә һәм Әлмөхәмәт МТС-тарында комбайндарҙы насар әҙерләйҙәр, уларҙа комбайндарҙың 30 проценттән кәмерәге ремонтланған. 1 июнгә молотилкалар 12,1 процентҡа, урғыстар — 30 процентҡа ремонтланған. Комбайндарҙы һәм урып-йыйнау машиналарын ремонтлауҙа бындай тревогалы хәл үткән йылдарҙа беҙҙә булғаны юҡ ине.

МТС-тарҙа механизатор кадрҙарын әҙерләү ҙә яҡшынан тормай, ә урожай йыйнау эштәренең уңышлы үткәрелеүе уларға бәйләнгән. Был кадрҙарҙың етешкәүе ҙур булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы әҙерләү насар ойошторолған. МТС-тар эргәһендә ойошторолған мәктәптәрҙә һәм курстарҙа ни бары 1038 комбайнер уҡый.

Машина-трактор станцияларында урожай йыйнауға әҙерлек эшен ҡыҫҡа срокта төҙәтеү өсөн нимә эшләргә кәрәк һуң? Ауыл хужалығы министерствоһы, партия райкомдары һәм район исполкомдары һис кисекмәҫтән һәр бер МТС-та эштең торошон яҡшылап тикшерергә һәм уларҙың урожай йыйнауға әҙерлек эшендә артта ҡалыуҙарын бөтөрөүҙе тәьмин итеүҙә саралар билдәләргә тейештәр. Яҡын көндәрҙә МТС-тарҙағы тәүге партия ойошмаларында партия йыйылыштары үткәрергә, уларҙа урожай йыйнауға әҙерлектең торошон һәм комбайндарҙы, башҡа урып-йыйнау машиналарын ремонтлау темптарын көсәйтеү, кадрҙарҙы һайлап алыу һәм әҙерләү мәсьәләләрен тикшерергә кәрәк.

Һәр бер МТС-та 1 июлгә тиклем ремонтты тамамлау өсөн комбайндарҙы, молотилкаларҙы һәм урғыс машиналарҙы ремонтлау темпын максималь көсәйтергә кәрәк. Ремонтланған комбайндарҙың сифатын ентекләп тикшерелергә һәм асылған етешһеҙлектәр бөтөрөлөргә тейеш.

Колхоздарҙа урып-йыйнауға әҙерлектең торошо ла шундай уҡ серьез тревога тыуҙыра. Улар үҙҙәренең көстәре һәм средстволары менән бөтә урып-йыйнау майҙанының 46 процентен урып-йыйырға тейештәр, ә быға бик насар әҙерләнәләр. 1 июнгә колхоздарҙа урғыс һәм лобогрейкаларҙың 43,2 проценте һәм молотилкаларҙың 53 проценте ремонтланған.

Колхоздарҙа ябыҡ ырҙын табаҡтары, иген киптергестәр һәм иген һаҡлағыстар төҙәү айырыуса насар бара. Мәҫәлән, Әлшәй, Архангель, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Дыуан, Белоҡатай, Стәрлебаш, Янаул һәм ҡайһы бер башҡа райондар был эшкә әле башламағандар. Был райондарҙың етәкселәре үткән йылдың әсе һабаҡтарын онотҡандар күрәһең. Үткән йыл ябыҡ ырҙын табаҡтарының һәм иген киптергестәрҙең әҙер булмауы арҡаһында ашлыҡ һуғыу, дымлы игенде таҙартыу һәм киптереү, орлоҡтарҙы сәсеү кондицияһына еткереү һуҙылды һәм игенде юғалтыуға һәм боҙоуға юл ҡуйылды. 1950 йылда ҡайһы бер колхоздар иген ташыуға транспорт әҙерләмәнеләр һәм урып-йыйнауҙың иң ҡыҙыу ваҡытында ауыр хәлдә тороп ҡалдылар. Шундай хәлдәр булды, комбайндарҙы туҡтатмайынса бушатыу өсөн брички етешмәне. Игенде әҙерләү пункттарына ямғырлы көндәрҙә ташығанда игенде ҡаплау өсөн турпышалар талап ителде, ә улар йыш ҡына етешмәнеләр.

Урып-йыйнау ваҡытында иген киптереү өсөн әҙерлекле кадрҙар булдырыу ҙур әһәмиәткә эйә. Иген киптереү технологияһын яҡшы белгән кеше иген киптергестәрҙең тәүлек әйләнәһендә юғары етештереүсәнлекле эшләүен тәьмин итә, киптереү ваҡытында игенде боҙмай һәм яғыулыҡты экономиялай. Шулай булһа ла, үткән йыл күп колхоздар иген киптереүсе кадрҙарҙы әҙерләмәнеләр, иген киптереү эшенә тәжрибәһеҙ колхозсыларҙы ҡуйҙылар, шуның арҡаһында ҙур юғалтыуға осранылар.

Республика колхоздарының күпселеге ырҙын табаҡтарында иген таҙартыуҙы механизациялаштырыу өсөн үҙҙәрендә булған мөмкинлектәрҙе сиктән тыш насар файҙаландылар. Двигателдәр, электр моторҙары һәм ат приводтары тик торҙолар, ә игенде таҙартыу күбеһенсә ҡул көсө менән башҡарылды. Шул уҡ ваҡытта ырҙын табаҡтарында аҡрын таҙартыу арҡаһында күп һанда эшкәртелмәгән иген тупланды, был әҙерләү пункттарына иген тапшырыуҙы тотҡарлап торҙо.

Урып-йыйнауҙы тулы әҙерлек менән ҡаршылау өсөн колхоздарҙың урожай йыйнауға әҙерлек эшендәге бөтә был етешһеҙлектәрен ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бөтөрөргә тейешбеҙ. Урғыстарҙы, лобогрейкаларҙы, иген таҙартыу машиналарын, үлсәүҙәрҙе, тараларҙы ремонтлау эшен һәр бер колхозда 1 июлдән дә ҡалмай тамамларға кәрәк. Ябыҡ ырҙын табаҡтарын, иген киптергестәрҙе һәм иген келәттәрен төҙәү һәм ремонтлауға айырыуса иғтибар бирергә, был эштәрҙе башҡарыу өсөн кәрәкле һанда эшселәр һәм төҙөлөш материалдары бүлергә кәрәк. Яңы иген киптергестәрҙе, ябыҡ ырҙын табаҡтарын төҙөүҙе һәм иҫкеләрен ремонтлауҙы 1 июлгә тамамлау өсөн төҙәү һәм ремонтлау графигын билдәләргә кәрәк.

Үткән йылдарҙағы кеүек уҡ, һәр бер колхоздың, совхоз һәм МТС-тың урожай йыйнауға әҙерлеген ентекләп тикшереүҙе ойошторорға кәрәк. Был эште 20 июндән дә һуңламай башларға һәм 1 июлгә тамамларға кәрәк. Тикшереүҙә ҡатнашыу өсөн колхоздарға, совхоз һәм МТС-тарға өлкә һәм райондарҙың етәксе работниктарын, ауыл хужалығы һәм төҙөлөш специалистарын ебәрергә кәрәк. Тикшереү һөҙөмтәләре колхоз правлениеларында, партия райкомдарында, райсовет исполкомдарында ҡаралырға һәм асылған етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөү өсөн иң оператив саралар күрелергә тейеш.

Быйылғы, республикалағы колхоздарҙың күпселеге эреләтелгән шарттарҙа колхоздарҙа балалар учреждениеларен: балалар баҡсаларын, яслеләрен һәм майҙандарын ойоштороу ғәҙәттән тыш әһәмиәт ҡаҙана. Бында шуны әйтергә кәрәк, хеҙмәт көндәре аҙ эшләнгән урындарҙа балалар учреждениеларенең булмауы бының сәбәптәренең береһе булып тора. Шулай булһа ла колхоздарҙың һәм райондарҙың айырым етәкселәре был эштең айырым әһәмиәтен баһалап еткермәйҙәр һәм колхоздарҙа балалар учреждениеларен ойошотормайҙар. Яҡындағы көндәрҙә һәр бер колхозда кәрәкле һанда балалар учреждениеларен ойошторорға, был учреждениеларға яҡшы етәкселәр һайлап алырға һәм балалар яслеләренең, балалар баҡсаларының һәм балалар майҙандарының нормаль эшләүҙәре өсөн бөтә шарттарҙы тыуҙырырға кәрәк.

Урып-йыйнау эштәрен ойоштороу тураһында һөйләүҙән элек, үткән йыл урожай йыйнауҙа булған етешһеҙлектәрҙе һәм хаталарҙы хәтергә төшөрөргә кәрәк. Күп машина-трактор станциялары урожайҙы комбайндар менән урып-йыйнауға һуңлап башланылар, күп кенә МТС-тарҙа арышты урып-йыйнауҙа комбайндар бөтөнләй тиерлек ҡатнашманылар. Был урып-йыйнауҙы һуҙыуға килтерҙе һәм иген әҙерләүгә, айырыуса урып-йыйнау эштәренең беренсе көндәрендә, кире йоғонто яһаны.

МТС-тарҙың һәм колхоздарҙың молотилкалары һәм иген киптергес машиналары һуңлап эшкә ҡушылды. Йыш ҡына колхоздарҙа арышты урып-йыйнау тамамланыуын, ә һуғыу эшенең башланмауын күрергә була ине.

Ҡайһы бер райондарҙа ашлыҡты ябай машиналар менән урыу һәм көлтәләргә бәйләү, әҫкертләү араһында ҙур өҙөклеккә юл ҡуйылды. Шуның һөҙөмтәһендә әҫкертләнмәгән ашлыҡ ямғырға эләкте, ҡырлыҡтарҙа, ҙураттарҙа һәм күбәләрҙә шытып ултырҙы, был урожайҙы ҙур юғалтыуҙарға һәм игенде боҙоуға килтерҙе.

Игенде һуғыу менән таҙартыу араһында ҙур өҙөклеккә юл ҡуйылды. Күп кенә колхоздарҙа һәм совхоздарҙа һуғылған, ләкин таҙартылмаған игендәр 100-әр тоннаһап, аҙналар буйына өйөмдәрҙә яттылар, үҙенән-үҙе ҡыҙып боҙолдолар. Иген государствоға тапшырыу өсөн ярамаҡһыҙ хәлгә килде.

Күп колхоздарҙа комбайндарҙан һәм молотилкаларҙан алынған игенде һалыу өсөн ырҙын табаҡтары әҙерләнмәне. Һөҙөмтәлә иген асыҡ урынға бушатылды һәм әрәм-шәрәм ителде.

Шулай уҡ колхозсыларҙың баҫыуҙа ҡуныуҙары өсөн баҫыу таборҙары әҙерләнмәне һәм дөйөм туҡланыу ойошторолманы. Урып-йыйнау ваҡытында колхозсылар ашарға һәм ҡунырға өйгә ҡайтып күп ваҡыт әрәм иттеләр.

Бөтә был етешһеҙлектәр урожай йыйнау һәм иген әҙерләүҙе һуҙыуға, күп игенде юғалтыуға килтерҙеләр һәм государствоға һәм колхоздарға ҙур зыян яһанылар. Беҙ был серьез етешһеҙлектәрҙе һәм хаталарҙы иҫкә алырға һәм уларҙы быйыл ҡабатламаҫҡа тейешбеҙ.

Урожай йыйнауҙы ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ үткәреү маҡсатында урып-йыйнау эшен һуңлатыуға юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ. Урожай йыйнауға башлап уҡ бөтә урғыстарҙы, лобогрейкаларҙы һәм ҡул менән урыу средстволарын ҡушырға тейешбеҙ. Машина-трактор станциялары колхоздар менән төҙөшкән договорҙар буйынса арышты комбайндар менән урып-йыйырға йөкләмә алдылар. Был йөкләмәләрҙе үтәргә һәм урып-йыйнау эшенә комбайндарҙы ваҡытында ҡушырға кәрәк.

Республиканың партия, совет, ауыл хужалығы органдары эштең сифатына, урып-йыйнау ваҡытында юғалтыуҙарҙы булдырмауға айырыуса иғтибар бирергә тейештәр. Беҙ колхоздарҙа һәм совхоздарҙа урожайҙы аҙ ғына юғалтыуҙарға ла түҙеп ҡарамау обстановкаһын булдырырға, ашлыҡты урып-йыйыу сифатына ентекле контроль булдырырға һәм был эште ебегәнлекте һәм хужаһыҙлыҡты ҡырҡа бөтөрөргә тейешбеҙ.

Үткән йыл беҙҙә күп кенә колхоздарҙа урожайҙы иҫәпкә алыу юл ҡуйғыһыҙ насар ойошторолғайны. Игенде һуҡҡанда ла, комбайндан алғанда ла, әҙерләү пункттарына һәм келәттәргә оҙатҡанда ла үлсәмәнеләр. Игенде таҙартҡандан һуң отходтар иҫәпкә алынманы һәм тикшерелмәне, был тәртипһеҙлектәрҙе бөтөрөргә һәм урып-йыйнауҙың бөтә стадияларында урожайҙы ныҡлы иҫәпкә алыуҙы тәьмин итергә кәрәк.

Үткән йыл республиканың күп колхоздары майлы культураларҙы, айырыуса тиҙ ҡойолоусы (рыжик, горчица һәм бейҙәрә етен) урып-йыйнағанда ҙур юғалтыуҙарға юл ҡуйҙылар. Был культуралар, уларҙың ҡиммәтле булыуҙарына ҡарамаҫтан, беҙҙә һуңғы сиратта урып-йыйналалар. Шулай уҡ көнбағышты йыйнау йыл һайын һуҙылып килә. Шул уҡ ваҡытта, беҙҙең шарттарҙа көнбағышты көҙгө һыуыҡтар осоронда йыйнау яҡшыраҡ тигән зарарлы фекер йәшәй. Был етешһеҙлектәрҙе иҫтә тотоп, быйыл колхоздарҙа һәм совхоздарҙа майлы культураларҙың өлгөрөүен ентекләп күҙәтергә һәм уларҙы иң ҡыҫҡа сроктарҙа: көнбағышты, 5—6 эш көнендә, рыжикте, горчица һәм бейҙәрә етенде 3—4 эш көнендә урып-йыйнауҙы тәьмин итергә тейешбеҙ.

Республиканың ҡайһы бер колхоздары һәр йыл һайын оҙон етен һәм киндер урожайының байтаҡ өлөшөн һәләк итәләр. Был культураларҙы ваҡытында йыйнамайҙар, уларҙы һуғыуҙы һуҙалар, ебетмәйҙәр һәм йәймәйҙәр, орлоҡ һәм сүсте государствоға тапшырыу буйынса үҙ йөкләмәләрен үтәмәйҙәр. Белоҡатай, Мәсетле, Асҡын, Баҡалы һәм Миәкә кеүек айырым райондарҙың етәкселәре был етешһеҙлектәргә күнеккәндәр. Һәм оҙон етенде, киндерҙе йыйнау һәм эшкәртеүгә ҡарата государствоға ҡаршы мөнәсәбәт факттары менән көрәшмәйҙәр. Партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының бындай түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәттәрен бөтөрөргә һәм быйыл оҙон етенде һәм тарманы үҙ ваҡытында йыйнауҙы, һуғыуҙы, ебетеү һәм йәйеүҙе ваҡытында үткәреүҙәрен тәьмин итергә ваҡыт.

Беҙ шәкәр сөгөлдөрөн ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйнап алыуға серьез иғтибар бирергә тейешбеҙ. Һеҙ Ҡарлыман шәкәр заводының хәрәкәт итеүсе предприятиелар сафына баҫыуын беләһегеҙ. Шәкәр сөгөлдөрө сәсеүсе Ҡырмыҫҡалы, Ауырғазы, Бишбүләк, Стәрлетамаҡ, Ғафури һәм Архангель райондарының бурысы заводты етерлек һанда сырьё йәғни шәкәр сөгөлдөрө менән тәьмин итеүҙән тора.

Быны иҫәпкә алып, шәкәр сөгөлдөрөн йыйнауҙы һуңламайынса башларға һәм уны ҡаҙыуҙы 10 октябргә, ә ташыуҙы 10 ноябрҙән дә һуңламайынса тамамларға кәрәк. Сөгөлдөрҙө ҡаҙыу һәм ташыу өсөн кәрәкле һанда колхозсыларҙы, йәнле тартыу көсөн һәм автомашиналарҙы беркетергә һәм сөгөлдөрҙө ҡаҙыу һәм ташыу тамамланғанға тиклем уларҙы башҡа эшкә күсереүгә юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Күк һағыҙ сәсеүсе райондарҙың партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары өсөн бик ҡиммәтле булған был культураны ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйнап алыу тураһында айырыуса хәстәрлек күрергә тейештәр.

Үткән йыл партияның ҡайһы бер райкомдары, райсовет исполкомдары, колхоз һәм совхоз етәкселәре орлоҡ участкаларының урожайын йыйнауға яуапһыҙ ҡаранылар, уны һуҙҙылар, шуның һөҙөмтәһендә байтаҡ һанда орлоҡто юғалттылар һәм яҙғы сәсеү өсөн етерлек орлоҡтары булманы. Тотош алғанда, республикала оҙон етендең һәм күп йыллыҡ үләндәрҙең күп һанда сәселеп еткерелмәүе лә орлоҡ участкаларының урожайын байтаҡ юғалтыу һөҙөмтәһе булып тора.

Уҙған йылғы һабаҡтарҙы иҫкә алып, бөтә колхоздарҙа ла һәм совхоздарҙа ла бөтә культураларҙың орлоҡсолоҡ участкаларында урожай йыйнауҙы әгәлә үткәреүҙе ойошторорға тейешбеҙ. Ошоно иҫәпкә алырға кәрәк, быйыл республика колхоздарында бойҙайҙың орлоҡсолоҡ участкалары ошо культураның фактик сәселгән майҙанынан уҙған йылдағыса 20 процент түгел, ә 15 процент күләмендә бүленә икәнлеген иҫтә тоторға кәрәк. Орлоҡсолоҡ участкаларын яҡшы тәрбиәләгәндә һәм уларҙы әгәлә рәүештә йыйнап алғанда был күсә барыусы орлоҡ фондын йәғни бойҙай сәсеү планына ҡарата бер ярым, ике тапҡыр күләмдә орлоҡ фонды булдырыу өсөн тулыһынса етерлек буласаҡ.

Иген һәм башка ауыл хужалығы продукттарын әҙерләү эшен ойошканлык менән үткәрергә

Иптәштәр!

1950 йылда беҙ республика буйынса иген әҙерләүҙең государство планының 9 октябргә үтәлеүе тураһында иптәш Сталинга доклад иттек. Был, әлбиттә, иген тапшырыуҙың йыллыҡ планын үтәү өсөн насар срок түгел. Ләкин беҙ уны бынан әлегерәк үтәй ала инек.

Беҙгә иген әҙерләүҙәрҙә нимә ҡамасаулыҡ итте һуң? Беҙҙә, бөтәһенән элек, урожай йыйнауҙы һәм иген әҙерләүҙе ойоштороуҙа булған хаталар һәм етешһеҙлектәр ҡамасаулыҡ иттеләр. Күп кенә колхоздар ямғырлы көндәрҙә урожай йыйнауҙы һәм иген тапшырыуҙы үткәреүгә ҡарата һәр яҡлап әҙерләнмәнеләр. Мин әйтеп үткәнемсә, уларҙың етерлек тиклем орлоҡ киптергестәре булманы һәм уларҙы дөрөҫ файҙаланыуҙы ойошторманылар. Ямғырлы көндәрҙә ашлыҡ һуғыу, һәм ашлыҡ таҙартыу мөмкин булырлыҡ ябыулы ырҙын табаҡтары төҙәмәнеләр. Талаһә шыҡлой һауа шарттарында иген ташырға яраҡлы ябыҡ таралары етерлек күләмдә әҙерләмәнеләр һәм башҡалар.

Шулай уҡ республиканың әҙерләү ойошмалары бигерәк тә ямғырлы көндәрҙә иген ҡабул итеүгә насар әҙерләнгәйнеләр. Уҙған йылдарҙа әҙерләүҙәр пункттарына иген көн һайын аҙ-азлап ҡына бик аҡрын ташылды, уны ҡабул итеү һәм урынлаштырыу ҡайһы түгел ине. Әҙерләүҙәр работниктары ошондай обстановкаға күнегеп киттеләр һәм игендең бер юлы күпләп килеүенә ныҡлап әҙерләнмәнеләр. Һәм пункттарға көнөнә 1000-әр тонна һәм унан да артығыраҡ иген килә башлағас, улар ҡаушап төштөләр һәм игенде ойошҡанлыҡ менән тиҙ ҡабул итеү һәм уны дөрөҫ урынлаштырыу өсөн әҙерләнмәгән булып сыҡтылар.

Партияның ҡайһы бер район комитеттәре һәм район Советтәре исполкомдары башҡа колхоздарға иғтибар бирмәйенсә алдынғы һәм әҙерләүҙәр пункттарына яҡын торған колхоздарҙан ғына иген тапшырыуҙы ойоштороу менән күберәк шөғөлләнделәр. Ошоноң һөҙөмтәһендә иген тапшырыуҙа артта ҡалыусы бик күп колхоздар барлыҡҡа килде, был колхоздар әҙерләүҙәр пункттарына иген ташыуҙы һуҙҙылар.

Һәм аҙаҡ килеп, күп кенә колхоздарҙың председателдәре район етәкселәре юл ҡуйыуы сәбәпле государствоға иген ташыуҙа тартыу көстәрен файҙаланманылар, машина ебәргәндә көтөп яттылар һәм әҙерләүҙәр пункттарына иген тапшырыуҙы һуҙып килделәр.

Ошо яңы һабаҡтар иҫкә алынырға һәм уларҙы быйыл иген әҙерләүҙәрҙә ҡабатламаҫ өсөн кәрәкле саралар күрелергә тейеш ине инде. Ләкин әлегә хәл «Главзаготзерно»ның Башҡортостан контораһы һәм продукт резервтәре управлениеһы уҙған йылдың ошондай уҡ хаталарын ҡабатлағанлыҡтарын, материаль-техник базаларҙы яңы урожайҙың игенен ҡабул итеүгә ҡәнәғәтләнерлек итеп әҙерләнмәгәнлектәрен күрһәтә.

Ошо йылдың 1 июненә заготзерноның яңы складтарын төҙәү планы ни бары 5 процентҡа, иҫкеләрен ремонтлау планы 40 процентҡа һәм продукт резервтәре управлениеһе складтарын ремонтлау 26,5 процентҡа генә үтәлгән.

Әҫкә пункттарҙан иген сығарыу бөтөнләй ҡәнәғәтләнерлек түгел, шуның һөҙөмтәһендә ағымдағы йылдың урожайын ҡабул итеүгә әҙерләүҙә тотҡарлыҡ яһала.

«Заготзерно»ның республика контораһы управляющийы иптәш Макаров һәм продукт резервтәре управлениеһе начальнигы иптәш Ефименко материаль-техник базаларҙы әҙерләүҙе йомшаҡ ойошторалар һәм әҙерләүҙәр пункттарын алда торған иген ҡабул итеүгә әҙерләү буйынса эштә кәрәкле кәҫергәнешлек тыуҙырманылар.

Элеваторҙарҙы, иген складтарын, иген киптергестәрҙе, электр кәсә, үлсәү, лаборатория оборудованиеларен һәм инвентарҙарен, шулай уҡ автотранспортты ошо йылдың 10 июленән дә һуңға ҡалмайынса әҙерләп бөтөү өсөн был эштең темпын көсәйтеү кәрәклеге тулыһынса аңлашыла. Яңы иген складтарын хөкүмәт тарафынан билдәләнгән сроктарҙа төҙәүҙе һәм эксплуатацияға тапшырыуҙы нисек кенә булһа ла тәьмин итергә кәрәк.

Партияның район комитеттәре һәм район Советы исполкомдары элеваторҙарға һәм әҙерләүҙәр пункттарына 1951 йыл урожайы игенен ҡабул итеүгә материаль-техник базаларҙы әҙерләүҙә бөтә яҡлап ярҙам күрһәтергә һәм был эшкә көндәлек контроль алып барырға бурыслылар.

Иген әҙерләү республиканың партия, совет һәм әҙерләүҙәр ойошмаларының иң мөһим хужалыҡ-политик бурыстарының береһе булып тора. Беҙ уны быйыл бөтә колхоздарҙың һәм совхоздарҙың государствоға иген тапшырыуҙа билдәләнгән пландарын үтәрлек итеп үткәрергә тейешбеҙ. Ошо маҡсаттарҙа һәр бер колхоздың һәм совхоздың урожай йыйнауҙың беренсе көнөнән уҡ государствоның әҙерләүҙәр пункттарына иген сығарыуҙарын ойошторорға, быны өсөн кәрәкле күләмдә йәнле тартыу көстәрен һәм автомашиналарҙы бүлергә кәрәк. Һәр бер колхозда һәм совхозда бөтә игенде ентекләп таҙартыуҙы, уны үҙ ваҡытында киптереүҙе һәм государствоға тулыһынса юғары сифатлы иген тапшырыуҙы тәьмин итергә кәрәк.

Республиканың партия, совет һәм әҙерләүҙәр органдары уҙған йылда бесән, йәшелсә, майлы һәм техник культуралар, күп йыллыҡ үлән орлоҡтары әҙерләү эшенә ҡәнәғәтләнерлек етәкселек итмәнеләр һәм уларҙы государствоға тапшырыу планының үтәлеүен тәьмин итмәнеләр. Был беҙҙең эшебеҙҙәге бик ҙур етешһеҙлек, уны бер генә минутҡа ла оноторға ярамай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, республиканың айырым партия, совет һәм әҙерләүҙәр органдары работниктары эштәге ошондай етешһеҙлектәр булған хәлдә лә уңыштар менән маҡтанып алырға ҡаршы түгелдәр. Улар иген әҙерләү планы республика йәки район буйынса үтәлгән икән, тимәк, колхоздарҙың һәм совхоздарҙың государствоға башҡа мәжбүри тапшырыуҙары тураһында онотторға мөмкин тип иҫәпләйҙәр.

Был работниктарға колхоздарҙың государствоға бесән, йәшелсә, майлы, техник культуралар һәм ауыл хужалығының башҡа продукттарын тапшырыу пландарын намыҫ менән үтәүҙәре иген тапшырыу кеүек уҡ, изге бурыс булып тора икәнлеген хәтергә төшөрөп үтеү файҙалы булыр. Беҙ ағымдағы йылда бөтә райондарҙың һәм колхоздарҙың государствоға майлы һәм техник культуралар, картоф, йәшелсә, бесән һәм күп йыллыҡ үлән орлоҡтары һәм ауыл хужалығының башҡа продукттары тапшырыуҙағы үҙ йөкләмәләрен иген тапшырыу менән бер рәттән тулыһынса һәм билдәләнгән срокта үтәүҙәренә өлгәшергә тейешбеҙ.

* * *

Иптәштәр! Республика партия ойошмаһы алдында ауыл хужалығы өлкәһендә торған мөһим һәм ҡатмарлы бурыстар ауылда беҙҙең бөтә етәкселек һәм ойоштороу эшебеҙҙе яҡшыртҡан шартта ғына уңышлы рәүештә үтәләсәктәр.

Партияның ҡайһы бер район һәм колхоз, МТС, шулай уҡ совхоз тәүге ойошмаларында партия массовый эш үҙ ағышына ҡуйылған. Партия ойошмалары колхозсыларҙы, МТС һәм совхоз работниктарын ауыл хужалығындағы төп бурысты уңышлы үтәү өсөн көрәшкә йомшаҡ ойошторалар. Колхоздарҙа, совхоздарҙа һәм машина-трактор станцияларында был бурысты үтәү өсөн социалистик ярыш йомшаҡ йәйелдерелгән. Хәҙер массовый-политик эштең үҙәген МТС-тарҙың трактор бригадаларына, колхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадаларына, баҫыу стандарына, колхозсыларҙың һәм трактористорҙың таборҙарына күсерергә кәрәк.

Украина ауыл хужалығы работниктарының изге патриотик башланғысына эйәреп, республикабыҙҙың колхозсылары, МТС работниктары һәм ауыл хужалығы специалистары үҙҙәренең йыйылыштарында ауыл хужалығындағы төп бурысты — урожай алыуҙы күтәреү, общественный малсылыҡтың һанын арттырыу һәм уның продукт биреүсәнлеген үҫтереүҙе үтәү буйынса серьез йөкләмәләр алалар.

Партия һәм комсомол ойошмалары был йөкләмәләрҙе көн һайын аңлата барырға һәм массаларҙы алынған йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү өсөн көрәшкә туплярға тейештәр. Партияның тәүге ойошмаларының йыйылыштарында һәм комсомол йыйылыштарында колхоз, совхоз һәм машина-трактор станцияһы тарафынан алынған йөкләмәләрҙең үтәлеше барышын систематик тикшерергә кәрәк. Шулай уҡ колхозсыларҙың, МТС һәм совхоз работниктарының дөйөм йыйылыштарында, бригада һәм звено йыйылыштарында алынған йөкләмәләрҙең үтәлеше барышын систематик тикшерергә кәрәк.

Партияның район комитеттәре йөкләмәләрҙең үтәлеше барышын пленумдарҙа, ә район Советы башҡарма комитеттәре — район Советтәренең сессияларында систематик тикшереп торорға тейештәр.

Өлкә һәм район газеталары алынған йөкләмәләрҙе үтәү буйынса партия, комсомол ойошмалары, колхоздар, совхоздар һәм машина-трактор станцияларының эш тәжрибәләрен үҙҙәренең биттәрендә һәр көн һайын яҡтыртып барырға тейештәр.

Иптәштәр! Республикала урожай алыу, общественный малсылыҡты үҫтереү һәм государство алдындағы үҙенең йөкләмәләрен үтәмәгән бер генә колхоздың да булмауына өлгәшәйек. Ауыл хужалығында булған эске резервтарҙы максималь файҙаланыу, колхоз производствоһына ауыл хужалығы фәне ҡаҙаныштарын һәм алдынғы тәжрибәләрҙе киң индереү өсөн арыу-талыуҙы белмәйенсә көрәшәйек. Бөтә баҫыу эштәрен үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үтәйек, киләсәк йылдарҙа юғары урожай алыу өсөн ныҡлы нигеҙлек тәьмин итәйек.

Беҙҙең Өлкә партия ойошмаһының, республика колхозсыларының, МТС, совхоз работниктарының һәм ауыл хужалығы специалистарының был бурысты намыҫ менән үтәү һәм илебеҙҙә коммунизм төҙөлөшө эшенә лайыҡлы вклад индереү өсөн көстәрен ҡыҙғанмаҫаҡтарына шик юҡ.

Өфө ҡалаһы эргәһендәге тәбиғәттең иң матур ерҙәрендә балалар өсөн унарлаған пионер лагерҙәре асылған. Бында мәктәп йәшендәге меңәрләгән балалар ял итә.

Һүрәттә: Өфө паровоздар ремонтлау заводының пионер лагерендә иптәш Т. Федорова пионерҙәргә китап уҡый. М. Әхмәтьянов фотоһы.

Йәйге ял күңелле үтәсәк

Мәктәптәрҙең башланғыс кластарында уҡыуҙар тамамланды. Уҡыусыларҙың йәйге каникулдары башланды. Өлкән кластарҙағы уҡыусылар ҙа тиҙҙән йәйге ялға сығасаҡтар.

Бөхетле балаларыбыҙҙың ялдарын күңелле һәм файҙалы итеп ойоштороуға партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ айырыуса ҙур иғтибар итәләр. Пионер лагерҙәре, санаторийҙәр асыуға һәм төрлө паходтар, экскурсиялар ойоштороуға күп средство сарыф ителә.

Башҡа республикалар менән бер рәттән, беҙҙең Башҡортостандың ҡала һәм ауылдарында балаларҙың йәйге ялдарын ойошҡанлыҡ менән уҙғарыу өсөн ҙур эш алып барыла. Үткән йылда республикабыҙҙа 115 пионер лагере ойошторолған ине һәм унда 23 мең бала ял итте. Бынан башҡа төрлө экскурсияларға, походтарға, мәктәптәр эргәһендәге пионерҙәр лагерҙәренә 10-ар меңләгән уҡыусылар ылыҡтырылды.

Быйыл уҡыусыларҙың йәйге ялы тағы ла ойошҡанлыҡ менән уҙғарыласаҡ. Өфө, Белорет, Черниковск, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Октябрьский ҡалаларында һәм ауылдарҙа 120 пионерҙәр лагере эшләй һәм уларҙа бөтәһе 25 мең бала ял итәсәк. Профсоюз, хужалыҡ һәм комсомол ойошмалары лагерҙәр асыу өсөн ҙур әҙерлек һәм ойоштороу эштәре алып барҙылар. Өфө паровоздар ремонтлау заводының Ҡариҙел йылғаһы буйында урынлашҡан лагере тәүге ҡунаҡтарҙы ҡабул итте лә инде. Унда уҡыусыларға ял итеү өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған. Спорт, уйын майҙандары, матур итеп йыһазландырылған клуб, уҡыу залы, асыҡ эстрада, сәскәләр менән биҙәлгән аллеялар, төрлө статуялар, плакат һәм лозунгылар — бөтәһе лә пионерҙәрҙең иғтибарын үҙҙәренә йәлеп итә. Шуға күрә лә уҡыусылар уны «Өфө Артекыһы» тип йөрөтәләр.

Тимер юлсыларҙың Ключерево станцияһы эргәһендәге, медицина һәм сауҙа работниктәре профсоюздары өлкә комитеттәренең пионер лагерҙәре лә быйыл яҡшы итеп йыһазландырылды. Шулай уҡ күмер промышленносе эшселәре, Ишембай нефтселәре, Стәрлетамаҡ тәҙәүселәре, Өфө нефть эшкәртеүселәренең балалары өсөн яңы лагерҙәр төҙөлә. Был лагерҙәрҙә пионерҙәр менән эшләү өсөн иң тәжрибәле вожатыйҙар, уҡытыусылар ылыҡтырылды.

Лагерҙәргә бармай, ҡалаларҙа ҡалыусы балалар ҙа ялдарын ойошҡанлыҡ менән үткәрәсәктәр. Улар өсөн мәктәп һәм йорт управлениеләре эргәһендә пионер лагерҙәре, майҙандар ойошторола. Тик Өфөлә генә ошондай лагерь һәм майҙандарҙа 10 меңдән артыҡ бала ял итәсәк һәм 5 меңгә яҡын уҡыусы төрлө экскурсияларҙа, походтарҙа ҡатнашасаҡтар. Республикабыҙҙың күп кенә урындарында йәйге туристик станциялар ойошторола. Бары тик Белорет, Ишембай ҡалаларының станциялары ғына 10 меңдән артыҡ уҡыусыны хеҙмәтләндерәсәк. Бынан тыш меңдәрсә балалар әрләтелгән колхоздарҙа, МТС һәм совхоздарҙа, яңы ултыртылған йәш урман полосаларында буласаҡтар. Шулай уҡ Өфө, Стәрлетамаҡ, Черниковск, Октябрьский, Белорет ҡалаларының промышленность предприятиелары менән танышасаҡтар, Советтар Союзы һәм Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, Сталин премияһы лауреаттары, яҙыусылар, артистәр, профессорҙар, стахановсылар менән осрашасаҡтар. Балаларыбыҙҙың йәйге ялы быйыл тағы ла күңеллерәк һәм йөкмәткелерәк үтәсәк.

З. Фәттехов.

Профессия һайлауға арналған осрашыу

Өфө ҡалаһының 10-сы класты тамамлаусы уҡыусыларының Башҡорт педагогия институтында, комсомол комитетенең тәҡдиме буйынса, институт уҡытыусылары һәм студенттәре менән профессия һайлауға арналған осрашыуы булып үтте.

Был осрашыуҙа яҡшы уҡыусы студенттәр һәм уҡытыусылар ҡатнаштылар.

Профессия һайлауға арналған доклад менән педагогия фәндәре кандидаты доцент иптәш Глухов сығып һөйләне. Үҙенең сығышында докладсы совет йәштәре алдында уҡыу өсөн бөтә кәрәкле шарттарҙың булыуы, совет йәштәренең профессияны үҙ теләктәре менән һайлап алыуҙары тураһында һөйләне.

Иптәш Глухов 10-сы класты тамамлаясаҡ уҡыусыларҙы экзамендарҙы уңышлы тапшырырға һәм фән донъяһының киң асылған ишектәренән ҡыйыу инергә саҡырҙы.

Докладтан һуң институттың йәш шағирҙәре Зотов, Орлов һәм башҡа иптәштәр үҙҙәренең совет уҡытыусыһына, тыныслыҡҡа, Корея геройҙарына арналған шиғырҙары менән сығып һөйләнеләр.

Институттың комсомол комитеты был осрашыуға арнап стена газетаһы сығарҙы.

Стена газетаһында пединститут студенттәренең профессия һайлауға арналған мәҡәләләре баҫылған.

Һәр бер кеше үҙенә профессия һайлаған саҡта, үҙенең иленә, халҡына ниндәй өлкәлә, ҡайҙа күберәк файҙа килтерә алыуы тураһында уйларға тейеш.

Доклад һәм сығыштарҙан һуң институттың художество үҙ эшмәкәрлек түңәрәге ҙур концерт бирҙе.

А. Абдуллин.

Тимер юлсылар газетаһы призенә эстафета

10 июнда «Уфимский железнодорожник» газетаһы редакцияһы «Локомотив» спорт обществоһы менән берлектә традицион эстафета уҙғара. Унда бөтә тимер юл участкаларының командалары һәм Өфө паровоздар ремонтлау заводы коллективы вәкилдәре ҡатнашалар.

Программала тигеҙ булмаған урындарҙан йүгереү, велосипедистәр ярышы, граната ырғытыу һәм башҡа төр спорт ярыштары бар.

Был эстафетаға Өфө тимер юл бүлеге командалары ҙур әҙерлек менән киләләр.

Д. Егоров.

Мичурин өйрәткәс

Туҡһына бойҙай, иҫәлана,
Ҡояшҡа ҡарап кілә,
Иркәләнгән бала кеүек
Ер-әсәгә баш эйә.
Шулай бер көн ҡояш һәм ер
Киткәндәр бәхәсләшеп,
Бик бай урожай үҫтереү,
Иҫәпһе, кемдең эше.
Ҡояш әреләнеп кенә
Нур-һаҡалын һыйпаған,
Саҡ ҡына көлөп-йылмайып,
Былай һүҙен башлаған:
—Яҡты, йылылыҡ биреүһәм,
Игендәр уңмаҫ ине,
Дингеҙ кеүек йәйрәү түгел,
Бер башаҡ булмаҫ ине.
Ер ҙа үҙ яуабын биргән,
Һис ҡояштан ҡалышмай.
—Тик яҡты, йылылыҡ менән
Әле эш барып сыҡмай.
Туҡлана бойҙай тупраҡта,
Ҡойона ямғыр-һыуға,
Үҙен һаҡлаған урмандай
Ҙур булып үҫә буйға.
Ҡояш һәм ер араһында
Шундай бер бәхәс булған,
Ә бригадир тыныс ҡына
Ҡолағын һалып торған.
Маңлайынан тирен һөрткән
Күп һөйләмәгән улай:
— Мине Мичурин өйрәткәс,
Бойҙай, иншаһеү, уңмай.

Ю. Әхмәдиев.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Нуриман районы «Белем» колхозында иптәш Бәдретдинов етәкселек иткән күк һағыҙ үҫтереү бригадаһы һәр гектарҙан 17-шәр центнер тамыр һәм 20-шәр килограмм орлоҡ урожайы үҫтереп алыу өсөн көрәшә. Бригадалағы 60 кеше хәҙер үҫемлектәрҙе өҫтәмә азыҡландырыуҙа һәм рәт араларын йомшартыуҙа үҙ-ара ярыша.

«Ленин юлы» һәм Баһау исемендәге колхоздарҙа ла күк һағыҙ плантациялары яҡшы тәрбиәләнәләр.

Ғ. Ғәйнуллин.

* * *

Әбйәлил МТС-ының Салауат батыр исемендәге колхозын хеҙмәтләндереүсе Минһажев һәм Бочкарев иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадаларының трактористәре пар һөрөү планын ҡыҫҡа срокта үтәргә йөкләмә алғайнылар. Улар алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәп, 450 гектар урынына 470 гектар пар һөрҙөләр.

З. Надиева.

* * *

Һөт-сусҡасылыҡ тресының совхоздары тәбиғи сабынлыҡтарҙың һәм үлән сәсеүлеге майҙандарын киңәйтеүгә ҙур иғтибар итәләр. Улар быйыл, үткән йылға ҡарағанда, сабынлыҡтарҙы 9 мең гектарға арттырҙылар.

Б. Кочетков.

* * *

Черниковск. Ҡала заводтары һәм фабрикаларының коллективтәре, «Автозапчасть» мастерскойы йәштәренең мөрәжәғәтенә ҡушылып, металл һыныҡтары йыйнау планын арттырып үтәргә йөкләмә алдылар.

Протез ярым фабрикаттары заводының комсомолецтәре был мөрәжәғәтте өйрәнгәндән һуң воскресник ойоштороп, бер көн эсендә 1,5 тонна металл һыныға йыйнанылар. Металл һыныҡтары йыйнау дауам итә.

У. Әһлиуллин.

* * *

Баҡалы районы «Марий—ял» ауыл хужалығы артеле члены Миңлебаев 10 бүре балаһы тотто. Шуның өсөн 2 мең 250 һум аҡса һәм ике һарыҡ менән бүләкләнде.

Ш. Яхин.

Полиция-фашистик провокацияға ҡаршы Париж хеҙмәтсәндәренең протестәре

ПАРИЖ, 6 июнь. (ТАСС). Париж районының дөйөм хеҙмәт конфедерацияһына (ВКТ) инеүсе профсоюздар берекмәһенең бинаһына РПФ (деголлевселар партияһы) фашистәренең, ә унан һуң полицияның һөжүм итеүе, бинаны полицияның баҫып алыуы, күп кенә етәксе профсоюз деятелдәрен арескә алыу һәм яралау, Париж районы профсоюздарының берекмәһен яҡлау өсөн йыйналған хеҙмәтсәндәрҙе туҡмау, — быларҙың бөтәһе лә Париж эшселәренең нәфрәтен тыуҙырҙы.

Ҡаланың һәм уның ситтәрендәге күп кенә предприятиеларҙа хеҙмәтсәндәр эштәрен туҡтаттылар, был фашистик провокацияға ҡаршы протест митингылары булды.

Тампль бульварында «Рено» заводы эшселәре менән полиция араһында бәрелеш булды.

ПАРИЖ, 6 июнь. (ТАСС). Дөйөм хеҙмәт конфедерацияһының (ВКТ) бюроһы 6 июнда кис коммюнике иғлан итте. Унда былай тип әйтелә:

«ВКТ бюроһы, ниндәй фекерҙә һәм ниндәй профсоюзда тороуҙарына ҡарамаҫтан, бөтә хеҙмәтсәндәрҙе профсоюздар иркенә ҡул һуҙыуға ҡаршы ҡырҡа протест белдереп сығыш яһарға саҡыра.

Хеҙмәтсәндәр үҙҙәренә хәйерселекте, һуғышты һәм фашизмды көсләп тағырға рөхсәт итмәйәсәктәр.

ВКТ бюроһы һәм федерацияһы бөтә хеҙмәтсәндәрҙе, бөтә профсоюз ойошмаларын, ВКТ, ФКХТ һәм «ФОРС Уврнер»ҙең бөтә активистәрен бөтә урындарҙа ла эш туҡтатыу, предприятиеларҙа һәм халҡ йәшәй торған пункттарҙа йыйылыштар үткәреү юлы менән киҫекмәҫтән протест белдерергә саҡыра.

Беҙҙең профсоюздарыбыҙҙың иркенә һөжүм яһалды. Эшселәр синыфы берләшеп, был иркте яҡларға тейеш».

Коммюнике түбәндәге һүҙҙәр менән тамамлана: «Берләшегеҙ, предприятиеларҙа эште туҡтатығыҙ, бер көнөлдән протест белдерегеҙ!

Фашизмға юл ҡуйылмаҫ!

Үҙен республикансы тип иҫәпләүсе бөтә кешеләр, эшселәр синыфын яҡлағыҙ, республиканы яҡлағыҙ!».

Франция коммунистәр партияһының протесе

ПАРИЖ, 7 июнь. (ТАСС). 7 июнда «Юманите» газетаһы Франция коммунистәр партияһының белдереүен иғлан итте. Унда ул «хөкүмәт һәм уның префекте социалист Бейло тарафынан Париж районы профсоюздарының берекмәһенә ялған фашистик провокацияны нәфрәтләнеп фаш итә. Улар үҙ полицияларын профсоюздар берекмәһенең бинаһын штурмлауға ташлағандар.

Тиңдәше булмаған был агрессия, — тип әйтелә белдереүҙә, — хөкүмәт менән де Голль араһында тулы килешеү булыуын билдәләй».

Франция коммунистәр партияһы бөтә хеҙмәтсәндәрҙе—коммунистәрҙе, социалистәрҙе һәм католиктәрҙе, бөтә демократтарҙы үҙ хәрәкәттәре менән хөкүмәт һәм деголлевсе партия фашистәренең мәкерле эштәрен өҙөргә саҡыра.

Трумэндең Пресс-конференцияла белдереүе

ВАШИНГТОН, 8 июнь. (ТАСС). Пресс-конференцияла 7 июнда сығыш яһап, Трумэн, Ҡушма Штаттарҙың хәрби расходтары артабан да өҙлөкһеҙ артасаҡ, тип белдергән.

«Иҫәпләүҙәргә ҡарағанда киләһе йылдың уртаһына тиклем, — тигән Трумэн, — был расходтар, хәҙерге ваҡыттағыға ҡарағанда, ике тапҡырға юғарыраҡ буласаҡ. Был, ошо расходтарҙың йыллыҡ кимәлен 30 миллиард долларҙан ашыуыраҡҡа арттырыу булып тора. Оборонаға (йәғни хәрби расходтар — ред.) расходтарҙы ошолай ҡырҡа арттырыу һөҙөмтәһендә һуңғы айҙарҙа булған бюджеттең артыҡ өлөшө әленән-әле үҫә барған дефицит менән алмашына. Бына шуға күрә лә беҙгә налогтарҙы арттырырға, контроль буйынса беҙҙең башҡа сараларыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалырға һәм уларҙы көсәйтергә кәрәк».

Америкалылар Көнбайыш Германияның хәрби промышленносен финансировать итәләр

ВЕНА, 8 июнь. (ТАСС). «Дер абенд» газетаһы Аденауэр канцелярияһынан алынған мәғлүмәттәргә һылтанып, Америка хөкүмәте Көнбайыш Германия хөкүмәтенә Шуман планына ҡарата алынған позиция өсөн рәхмәт белдереп, кредит бирергә вәғәҙә иткән, тип яҙа.

Аденауэр финанс министренә, миндә булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда америкалылар кредиттәрҙе бүлеү хоҡуҡын үҙҙәрендә ҡалдыралар һәм был кредиттәрҙе тик Көнбайыш Германияны ремилитаризациялау менән туранан-тура бәйләнгән маҡсаттар өсөн генә файҙаланырға рөхсәт итәсәктәр, тип белдергән.

АҠШ-тың оборона министре Маршаллдың Алыҫ Көнсығышҡа барыуы

ЛОНДОН, 8 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Токиолағы хәбәрсеһе, АҠШ-тың оборона министре Маршалл 8 июнда кис Корейла булғандан һуң самолетта Японияға килде, тип тапшыра.

Ул Корейла генерал Риджуэ менән бергә булды һәм Америка командующийе менән кәңәшләште.

Маршалл генерал Риджуэ һәм генерал Ван Флит һәм башҡа командующийҙар менән йәшерен кәңәшмә үткәрҙе.

Көнбайыш Берлиндә халҡтан һорау алыу

БЕРЛИН, 8 июнь. (ТАСС). АДН агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 6 июнда Көнбайыш Берлиндә Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы халҡтан һорау алыуҙа 6.246 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 5.408-е ремилитаризациялауға ҡаршы, 239-ы ремилитаризация өсөн тауыш биргән һәм 599 кеше тауыш бирәүҙән тыйылып ҡалған.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 8 июнь. (ТАСС). К... халҡ-демократик республикаһы Халҡ ... мияһының баш командованиеһе 8 ... бөтә фронттарҙа ла Корея Халҡ арм... ның частәре Ҡытай добровольцтәре ... үҙ-ара тығыҙ хәрәкәттә 38-се пар... дан төньяҡтараҡ Америка-Англия ин... вентлары ғәскәрҙәренең контратака... уңышлы кире ҡағалар, уның йән... сенә һәм техникаһына ауыр юғалт... килтерәләр, тип хәбәр итте.

8 июнда самолеттарҙа атыусы ғ... лар дошмандың 13 самолетын атып ... шерҙеләр.

Пхеньянды варварҙарса бомбаға тотоу

ПХЕНЬЯН, 7 июнь. (ТАСС). Бына 16-сы көн инде иртән, кис һәм төнө ... рика самолеттары Пхеньян ... варварҙарса һөжүм яһайҙар. Күп ... бомбаға тотоуҙар менән Америка ... ҙары ҡаланы таш, көл, тимер ... әйләндерҙеләр. Ара-тирә ялпырыл... емерелгән биналарҙың ҡалдыҡтары ... күренә. Пхеньян халҡы күптән ин... дырылған йорттарҙың подвалдарын... землянкаларҙа йәшәй. Был емерелг... лала бер ниндәй ҙә хәрби объект... булмауы Америка командованиеһ... шы билдәле. Шуға ҡарамаҫтан, ... тың самолеттары ҡалаға һөжүм ите... уам иттерәләр. Үткән 10 көн ... Пхеньянға меңдән артығыраҡ, шу... тән һуңынан шартлаусы бик күп ... ташланды. Был бомбалар ҡала ... рында билдәле ваҡыттарҙан һуң ... әйләнәһенә шартлаған көндәр ҙә ... Тыныс халҡтың төҙәк ҡалған бер ... йорто ла емерелгән. Был күп ... күргән ҡаланың тиҫтәләгән бала... ҡатын-ҡыҙҙары, ҡарттары үлтерел... һәм яралананған.

Төндә, шулай уҡ болотло ... Америка интервенттәре бомбаларҙы т... һеҙ рәүешә ташлайҙар. Америка ... цияһының Пхеньянға һөжүм итер... нерал Риджуэның әйтеүенсә, Кор... «буш ысыҡ зонаһына» әүерелдерер... ташыусы Америка агрессорҙарының ... ҡыҫ йөҙөн тағы ла бер тапҡыр күр...

Корея партизандарының уңышлы хәрәкәттәре

ПХЕНЬЯН, 8 июнь. (ТАСС). ... Халҡ армияһының Америка-Англия ин... вентлары ғәскәрҙәренең контратака... кире ҡағыусы частәренә Корея ... тыр партизандары ҙур ярҙам күрһәт... Халҡтың үс алыусылары дошман ... уның коммуникацияларын, сваме ... лар, дошман отрядтәренә һөжүм ...

Кореяның Үҙәк телеграф агентство... ның билдәләүенә ҡарағанда, Ким Ы... Бен командовать иткән партизан... рәдә интервенттәр тылында ... хәрәкәт итә.

Күптән түгел халҡ үс алыусыла... ҙаренең боевой эшмәкәрлектәренә ... яһаны. Дошманға ҡаршы 39 ... улар 8 меңдән артығыраҡ ... терҙеләр һәм яраланылар, 741 ... пленға алдылар, бай трофейҙар, ... иҫәптән реактив пушкалар, ауыр ... меттар һәм башҡа хәрби ... ҡулға төшерҙеләр.

Ким Ын Бендең партизандар ... урындағы халҡтың киң яҡлауы ... хәббәтә менән файҙалана, халҡ ... бөтә төр ярҙам күрһәтә.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

„ГЛАВКИНОПРОКАТ"ТЫҢ БАШҠОРТОСТАН КОНТОРАҺЫ
республика экрандарына
„СПОРТ НАМЫҪЫ"

тигән яңы художестволы фильм сығара
М. Вольпин, Н. Эрдман сценарийҙары.
Владимир Петров постановкаһы.
Режиссер—Н. Досталь.
Ролдәрҙә артистәр: А. Грибов, Н. Крючков, Ж. Сергеев, М. Лифанова, В. Зотова һәм башҡалар.
Ленин орденле „Мосфильм" киностудияһы производствоһы.
„Главкинопрокат" сығарылышы.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — иртән «РУСАЛКА», кис «КЭТО ҺӘМ КОТЭ».

Рус драма театрында — иртән «КӨНБАЙЫШТАҒЫ СИК», кис «ҠОТОРОНҒАН АҠСАЛАР».

«Октябрҙә» — «ТЫНЫСЛЫҠ БӨТӘ ДОНЪЯЛА ЕҢЕР».

«Салауатта» — «НЕБЕСНЫЙ ТИХОХОД».

«Уралда» — иртән «СУВОРОВ», кис «МИНЕ КӨТ».

Матросов исемендәге кинотеатр... «ЗОЛУШКА».

Рус драма театры залында опера һәм балет театры солистәре ҡатнашлығында БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы П. П. КОТОВ концерте.

Кис 9 сәғәттә башлана.

Бөгөн һәм көн һайын Матросов ... мендәге үҙәк культура һәм ял ... цирк артисы Максименко башҡар... һауала осоу.

Кис 10 сәғәттә башлана. ... оркестр уйнай.

„ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН"
ГАЗЕТАҺЫНА 1951 ЙЫЛҒА ПОДПИСКА ҠАБУЛ ИТЕҮ ДАУАМ ИТӘ.

Подписка „Союзпечать"тең ҡалаларҙағы бүлектәрендә, связь бүлектәрендә һәм агентстволарында, подписка ҡабул итеү пункттарында, шулай уҡ предприятиеларҙа, учреждениеларҙа, совхоздарҙа һәм колхоздарҙа подписка буйынса общественный уполномоченныйҙар тарафынан ҡабул ителә.

Өфө ҡалаһы Ветошников урамының 100-сө номерлы йортондағы 2-се квартирала йәшәүсе гражданка Мамлеева Вариҙә Моталлап ҡыҙы ошо уҡ йортта йәшәүсе Батумов Әсәдулла Баһаутдин улы менән айырылышыу тураһында ... ҡуҙғата. Эш Өфө ҡалаһы Киров р... ның 2-се участка халҡ судында ... ласаҡ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02515 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 2500...

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

КЫҘЫЛ БАШКОРТОСТАН

№ 114(8831)
1951 йыл
12
ИЮНЬ
шишәмбе

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттаре, Башкорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө кала Советы органы.

хакы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башкорт АССР-ы Өфө районы колхозсыларының һәм колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС һәм совхоз работниктәренең, ауыл хужалығы специалистәренең йөкләмәһе (1-се бит).

Башкорт АССР-ы Балтач районы колхозсыларының һәм колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең йөкләмәһе (1-се бит).

Башкорт АССР-ы Бүҙәк районы колхозсыларының, колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС, ЛЭС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең йөкләмәһе (1-се бит).

Мәскәүҙә бөйөк рус яҙыусыһы Максим Горькийға һәйкәл асыу (1-се бит).

ВКП(б) ӨЛКӘ КОМИТЕТЕ ПЛЕНУМЫ (2-се бит).

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР (2-се бит).

ЯПОНИЯ МЕНӘН ЯРАШЫУ ДОГОВОРЫ ТУРАҺЫНДА АКШ ХӨКҮМӘТЕНӘ СССР ХӨКҮМӘТЕНЕҢ НОТАҺЫ (3-сө һәм 4-се биттәр).

СПЕЦИАЛИСТ КӨҢЕШТӘРЕ. F. Чанышев. — Кин рәтлә сәсеүлектәрҙе эшкәртеүҙе механизациялаштырыу (4-се бит).

Прагала Генералиссимус И. В. Сталиндең монументаль скульптураһы куйыла (4-се бит).

Корсялағы вакиғалар (4-се бит).

Индия общественносе Советтар Союзының эскерһеҙ ярҙамын һатлай (4-се бит).

Урожай йыйнау һәм ауыл хужалығы продукттары әҙерләү—партия ойошмаларының мөһим эше

Республикабыҙҙың ауыл хужалығы үҫә. Колхоз һәм совхоз баҫыуҙарының урожай биреүсәнлеге, общественный малдарҙың тоҡомо, үрсеүе һәм продукт биреүсәнлеге йылдан-йыл яҡшыра бара.

Башкорт АССР-ының ауыл хужалығын үстереүҙә коммунистәр партияһы, Совет хөкүмәте һәм бөйөк юлбашсыбыҙ Иосиф Виссарионович Сталин үҙе көндәлек хәстәрлек күрә һәм атайҙарса ярҙам итә. Колхозсы крәстиәндәрҙең материаль тормошо һәм көн-күреше яҡшыра, доходтары арта, хеҙмәттәре еңеләйтелә. Ауыл хужалығы эштәренең күпселек күләме механизациялаштырылды. МТС-тар һәм ЛЭС-тар һаны күбәйҙе, уларҙағы тракторҙар һәм комбайндар һаны артты.

Ауыл хужалығының культураһы ла үҫә, ер эшкәртеү йылдан-йыл яҡшыра. Республикабыҙҙың колхоздары һәм совхоздары яҙғы сәсеүҙе уңышлы тамамланылар. Быйыл яровой культуралар, үткән йылға ҡарағанда, 295 мең гектарға яҡын артыҡ сәселде. Бойҙай сәсеүҙең государство планы арттырып үтәлде. Күп кенә МТС-тар һәм совхоздар тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙа байтаҡ эш башҡарҙылар.

Ләкин яҙғы сәсеү — бөтә ауыл хужалығы культураларының урожай биреүсәнлеген күтәреү өсөн көрәштең тәүге этабы ғына булып тора. Юғары урожай алыу өсөн сәсеүлектәрҙе яҡшы тәрбиәләүҙе ойоштороға, бөтә ауыл хужалығы культураларының урожайын юғалтыуһыҙ йыйнап алыуҙы һәм уны өлгөлө һаҡлауҙы, государствоға ауыл хужалығы продукттары тапшырыуҙы срогынан алда үтәүҙе ойоштороға кәрәк.

Күптән түгел генә ВКП(б) Башкортостан Өлкә Комитетенең нәүбәттәге пленумы булып үтте. Пленум үҙенең беренсе көн тәртибе итеп республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерлек һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында тикшерҙе һәм эшлекле ҡарар ҡабул итте.

Урожай йыйнау эштәре башланғансы общественный малсылыҡ өсөн ашыҡ базаһы булдырыу — ауылдағы бөтә общественностең мөһим эше икәнлеге пленумда айырата билдәләнде. Сөнки күп кенә колхоздарҙа мал аҙығы туплауға әҙерлек үҙ ағышына тапшырылған. Партия ойошмалары колхоз һәм совхоз етәкселәренең эшмәкәрлегенә контролде йомшартҡандар. Һөҙөмтәлә колхоздарҙа мал аҙығы әҙерләү машиналары әлегәсә ремонтланып бөтмәгән. Мал аҙығы әҙерләү машиналарын ремонтлау эше МТС-тарҙа айырыуса һүлпән бара. Сельхозснаб склдтарында меңләп артыҡ бесән сапҡыс һәм силос ҡырҡҡыс машиналар колхоздар тарафынан әлегәсә алынмайынса тора.

Урожай йыйнау — ауыл хужалығы эштәренең иң яуаплы һәм иң киеерәнешле осоро булып иҫәпләнә. Урожайҙы тәрбиәләп үстереү менән бергә, уны юғалтыуһыҙ йыйнап алырға кәрәк. Ләкин ВКП(б)-ның ҡайһы бер райкомдары ашлыҡтарҙың яҡшы үҫеүенә ҡарап маһаялар, урожай йыйнауға әҙерлек эшенә контролде йомшартҡандар.

Республикабыҙҙың МТС-тары быйыл бөртөклө ашлыҡ культуралары дөйөм майҙанының 54 процентен һәм 100 мең гектар башҡа төрлө культураларҙың урожайын комбайн менән йыйнарға тейештәр. Эштең был күләме бик ҙур һәм яҡшы әҙерлек талап итә. Шуға ҡарамаҫтан, комбайндарҙы урожай йыйнауға әҙерләү эше республикала һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел әле. Комбайндарҙы ремонтлау планы ни бары яртылаш ҡына үтәлгән, хатта үткән йылғы ошо ваҡытҡа сағыштырғанда алты ярым процентҡа кәмерәк ремонтланған. Покровка, Архангель, Мишкә, Әбйәлил һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың МТС-тарында комбайндар ремонтлау планының ни бары дүрттән бер өлөшө генә үтәлгән.

Колхоздарҙа ла урып-йыйнауға әҙерлектең торошо шулай уҡ яҡшынан түгел. Быйыл колхоздар бөтә урожай йыйнау майҙанының 46 процентен үҙҙәренең көстәре һәм мөмкинлектәре менән башҡарырға тейештәр. Был ҙур эште хәл итеү өсөн партияның колхоз ойошмаларынан ҙур иғтибарлылыҡ талап ителә һәм һәр бер коммунистең колхоз производствоһында патриотик өлгө күрһәтеүе кәрәк. Хәҙерге көндә колхоздарҙа урғыс, лобогрейкаларҙың һәм молотилкаларҙың ни бары яртыһы ғына ремонтланған. Шуға ҡарамаҫтан, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Белокатай һәм башҡа байтаҡ райондарҙың партия ойошмалары колхоздарҙа урожай йыйнауға әҙерлекте үҙ ағышына тапшырғандар.

Урожай йыйнау һәм государствоға ауыл хужалығы продукттары тапшырыу пландарын өлгөлө үтәү эше беренсе нәүбәттә кешеләрҙе һәр бер эштең конкрет участкаһына туплауға һәм механизатор кадрҙарын яҡшы әҙерләүгә, шулай уҡ улар араһында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуға бәйләнгән. Комбайнерҙар, молотарҙар, урғыс һәм лобогрейкала эшләүселәрҙе әҙерләү, яҡшы инструктировать итеү һәм улар араһында социалистик ярыш ойоштороу — партияның колхоз, совхоз һәм МТС ойошмаларының хәҙер көндәлек мөһим һәм бик яуаплы бурысы булып тора. Урожайҙы юғалтыуһыҙ йыйнап алыуҙа һәм государствоға ауыл хужалығы продукттары тапшырыу эше лә кадрҙарҙы дөрөҫ һайлап алыу, урынлаштырыу һәм улар менән даими партия-политик эш алып барыу менән генә уңышлы хәл ителәсәк.

Яңы урожайҙан ауыл хужалығы продукттарын государство склдтарына ҡабул итеп алыуға ла бик оператив һәм өлгөлө әҙерләнергә кәрәк. Бының өсөн заготзерно, элеватор һәм Әҙерләүҙәр министерствоһының урындағы аппараттары работниктәренең айырыуса эшмәкәрлек, инициатива күрһәтеүҙәре талап ителә. Ауыл хужалығы продукттары әҙерләү, ҡабул итеү һәм һаҡлау өсөн сажырылған заготзерно, элеватор һәм уполминзаг аппараты работниктәренең эшмәкәрлеге ВКП(б) райкомдарының көндәлек контроллегендә булырға тейешле. Ләкин әлегәсә ауыл хужалығы продукттары ҡабул итеүгә әҙерлек эше партия ойошмаларының контроленән ситтә ҡала килделәр. Шуға күрә лә заготзерноның яңы склдтар төҙөү планы ни бары бөгөн процентҡа, иҫкеләрен ремонтлау планы яртылаш ҡына үтәлгән әле. Ә продукттар резерв управлениеһе склдтарын ремонтлау планы ни бары дүрттән бер өлөшкә генә үтәлгән. Шулай уҡ кадрҙар әҙерләү эше лә үҙ ағышына тапшырылған.

Общественный малсылыҡҡа аҙыҡ туплау, урожай йыйнау һәм ауыл хужалығы продукттары әҙерләүгә әҙерлек эштәренең артабан да ҡәнәғәтләнмәҫлек булыуы һис түҙеп торорлоҡ хәл түгел. Шуға күрә лә ВКП(б) райкомдары һәм партияның тәүге ойошмалары был эште үҙ ҡулдарына алырға һәм өлгөлө әҙерлекте тәьмин итергә тейештәр. ВКП(б) Өлкә Комитете пленумы ҡарарын ауыл эшсәндәренә еткерергә һәм пленум ҡарарын әҙмә-әҙ үтәүҙе ойоштороға бурыслылар.

Республикабыҙҙың ауыл хужалығы хәҙерге заман техникаһы менән ныҡ ҡоралланған һәм ул техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланырға, шул нигеҙҙә мул урожай үстереп алырға, уны юғалтыуһыҙ йыйнарға һәм общественный малсылыҡтың продукт биреүсәнлеген яҡшыртыуға өлгәшергә кәрәк. Колхозсыларҙың, МТС һәм совхоз эшселәренең, ауыл хужалығы специалистәренең намыҫлы хеҙмәте, коммунистәрҙең ойоштороусы һәм рухландырыусы эшмәкәрлеге бөтә донъяла тыныслыҡ эшенә ҙур вклад булыр.

Комбайндарҙы ремонтлау ҡыҙыу бара

Ҡандра районы Ҡарамалы Ғөбәй МТС-ы механизаторҙары социалистик ярыш йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр. МТС яҙғы сәсеүҙе һәм пар һөрөүҙе юғары агротехник сроктарҙа башҡарҙы.

Механизаторҙар хәҙер юғары урожайҙы юғалтыуһыҙ йыйнап алыуға әҙерләнәләр. Комбайндарҙы ремонтлау эше ҙур ойошҡанлыҡ менән бара. Был эштә ес бригада ҡатнаша. Ремонтсылар эш сәғәтен тулыһынса файҙаланыу өсөн көрәшәләр.

МТС эргәһендәге тәүге партия ойошмаһы һәм ремонтсы бригадаларҙағы партия группалары эш йомғаҡтарын тикшереп баралар, айырым етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү сараларын күрәләр. Ремонтсылар араһында системалы рәүештә бәседәләр үткәрелә, һәр бит көн һайын боевой листоктар сығарыла.

Ремонтсылар араһында политик-массовый эш алып барыу, производствоны һәм хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу эштең уңышын хәл итте. Хәҙер МТС-та комбайндарҙы ремонтлау планы 62 процентҡа үтәлде. Ремонт средстволарына 11 процент экономия яһалды. Иптәш Әхмәтшина етәкселек иткән бригада ярышта алдынғы сафта бара.

МТС етәкселәре комбайнерҙар әҙерләү эшенә ҙур иғтибар бирәләр. Хәҙерге көндә МТС эргәһендәге 2 айлыҡ курста 18 кеше уҡый. Шулай уҡ Бәләбәй механизаторҙар мәктәбендә 8 кеше уҡып ҡайтты.

МТС коллективы комбайндарҙы ремонтлауҙы 15 июнгә, бөтә башҡа урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙы 25 июнгә тамамлау өсөн көрәшә.

Башкорт АССР-ы Өфө районы колхозсыларының һәм колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС һәм совхоз работниктәренең, ауыл хужалығы специалистәренең

ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Большевиктәр партияһының, Совет хөкүмәтенең, бөйөк Сталиндең колхоз короллошо тураһында, уны тағы ла нығытыу һәм сәскә аттырыу тураһында атайҙарса хәстәрлек күреүҙәре менән рухланып, беҙ, Украина игенселәре өлгөһендә, бөтә халыҡ социалистик ярышына ҡушылып, үҙ өҫтөбеҙгә түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ:

Арыш сәсеүлегенең барлыҡ майҙанының һәр гектарынан 108-әр бот, яҙғы бойҙайҙан — 114-әр бот, тарыныҡ һәр гектарынан 15-әр центнер, ҡара бойҙайҙан — 100-әр бот, картофтан — 200-әр центнер, 1700 гектар майҙанда йәшелсәнең һәр гектарынан 150-шәр центнер, 2000 гектар майҙанда күп йыллыҡ үләндең һәр гектарынан 40-ар центнер бесән, 8 мең гектар майҙанда тәбиғи бесәнлектең һәр гектарынан 20-шәр центнер бесән, тамыр аҙығының һәр гектарынан 250-шәр центнер урожай йыйнап алырға.

Иген әҙерләүҙең государство планын 1 октябрҙән дә һуңламайынса, ә картоф һәм йәшелсә тапшырыу планын — 15 октябргә тамамларға.

Мөгөҙлө эре малдар һәм һарыҡтар үстереүҙең государство планын 105 процентҡа, сусҡалар һәм ҡоштар буйынса 103 процентҡа, йылҡысылыҡ буйынса 103 процентҡа үтәргә.

Малдарҙы ҡышлатыуға әҙерләүҙе 15 октябргә тамамларға, һәр бер 100 баш инә малдан: 100 быҙау, 120 бәрәс, 1200 баш сусҡа балаһы алып үстерергә.

Һәр бер һауын һыйырҙан ауыл хужалығы артелдәрендә 2000 литр һөт, ә совхоздарҙа — 2500 литр һөт һауып алырға. Һәр бер һарыҡтан 3-әр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы, һәр бер тауыҡтан уртаса 85-әр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә. «1-се биш йыллыҡ», Хрущев исемендәге колхоздар — һәр бер тауыҡтан 100-әр йомортҡа аласаҡтар.

Государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыуҙы 1 ноябргә тамамларға.

Беҙ йөкләмәләребеҙҙе, Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә, намыҫ менән үтәрбеҙ һәм беҙҙең һөйөклө социалистик Тыуған илебеҙҙең тағы ла сәскә атыуы һәм ҡеүәтен нығытыу өсөн көрәш эшенә үҙебеҙҙең вкладыбыҙҙы индерербеҙ.

Йәшәһен беҙҙең һөйөклө юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ бөйөк Сталин!

Йөкләмә Өфө районы колхозсыларының һәм колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС һәм совхоз работниктәренең, ауыл хужалығы специалистәренең йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Башкорт АССР-ы Балтач районы колхозсыларының һәм колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең

ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Беҙ, Балтач районы колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре Украина игенселәренең өлгөһөндә, 1951 йылда түбәндәге күрһәткестәргә ирешеү өсөн үҙ өҫтөбеҙгә социалистик йөкләмәләр алабыҙ:

Бөртөклө ашлыҡ культураларының бөтә 42 мең гектар майҙанының һәр бер гектарынан уртаса 100-әр бот, шул иҫәптән арыштың бөтә майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот, ә 4000 гектар майҙанда һәр бер гектарҙан 120-шәр бот урожай йыйнап алырға. Яҙғы бойҙайҙың бөтә майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот һәм 4000 гектар майҙанының һәр бер гектарынан 115-әр бот урожай йыйнап алырға.

Продукт бирә торған общественный малсылыҡты һәм ҡошсолоҡто үстереүҙең өс йыллыҡ планын, йылҡысылыҡты үстереүҙең ике йыллыҡ планын срогынан алда үтәүгә ирешергә, общественный малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырырға, кәрәкле страховой запастарҙы булдырыуҙы иҫәпкә алып, малдар аҙығы әҙерләүҙең государство планын арттырып үтәргә. Малдарҙы ҡышлатыуға әҙерлекте 15 сентябргә тамамларға.

Малсылыҡты үстереүҙең государство планын 1 октябргә үтәүгә ирешергә. Һәр бер һауын һыйырҙан 1400-әр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 2,7 килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы, һәр бер тауыҡтан уртаса 70-әр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

Тәбиғи болондоҡтарҙың һәр гектарынан 30-ар центнер, сәсеп үстерелгән күп йыллыҡ үләндәрҙең һәр гектарынан 35-әр, бер йыллыҡ үләндәрҙән 30-ар центнер бесән урожайы алырға, тамыр аҙыҡ һәм башҡа культураларының һәр гектарынан 180-шәр центнер урожай алырға.

Иген әҙерләүҙең государство планын 1 октябргә, ит, һөт, йөн һәм башҡа малсылыҡ продукттары тапшырыу планын 7 ноябргә тамамларға.

Йөкләмә Балтач районы колхозсыларының һәм колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Башкорт АССР-ы Бүҙәк районы колхозсыларының, колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС, ЛЭС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең

ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Беҙ, Бүҙәк районы колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм ЛЭС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре, Украина игенселәре өлгөһөнә эйәреп, социалистик ярышҡа ҡушылабыҙ һәм түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ:

Бөтә сәсеүлек майҙанында ужым культураларының һәр гектарынан 110-ар бот, яҙғы культураларҙың һәр гектарынан 100-әр, шул иҫәптән бойҙайҙан 100-әр бот, көнбағыштан 50-шәр, тарматан — 42-шәр, горчицанан — 48-әр, тарынан — 75-әр, картофтан — 1000-әр, йәшелсәнән 780-шәр бот урожай алырға.

Ужым сәсеүҙе 15 августан да һуңға ҡалдырмайынса тамамларға. Урожай йыйнауҙы һәм эҫкертләүҙе 25 эш көнендә һәм ашлыҡ һуғыуҙы 45 эш көнендә тамамларға. Государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда, 15 сентябргә үтәргә. 1952 йылдың бөтә яҙғы сәсеүенә пар күтәреүҙе 1 октябргә тамамларға.

Продукт биреүсе общественный малсылыҡты үстереүҙең өс йыллыҡ планын үтәүгә өлгәшергә, мал аҙығы әҙерләүҙең государство планын, страховой запас булдырыу менән бергә, арттырып үтәргә. Малдарҙы ҡышлатыуға әҙерләүҙе 1 октябргә теүәлләргә.

Фураждағы һәр бер һыйырҙан 1700-әр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 3-әр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы, һәр бер тауыҡтан 65-әр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә. Государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыу планын срогынан алда, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 34 йыллығына үтәргә.

Йөкләмә Бүҙәк районы колхозсыларының һәм колхозсы катын-кыҙҙарының, МТС һәм ЛЭС эшселәренең, ауыл хужалығы специалистәренең йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Беҙ яҡшы әҙерләнәбеҙ

Урожай йыйнауға әҙерләнеү — мөһим эш ул. Беҙ быға ныҡ иғтибар итәбеҙ.

Бесән сабыуға һәм урожай йыйнауға әҙерлекте көсәйтеү маҡсатында беҙ махсус комиссия төҙөнөк. Уның составына партия члендәре, ауыл Советы депутаттары, колхоз правлениеһы члендәре инделәр. Комиссия члендәре колхозда ауыл хужалығы машиналарын ремонтлау, бесән һәм урожай йыйнауға әҙерләнеү эштәрен тикшерҙе һәм уның һөҙөмтәһе правление ултырышында ҡаралды. Шулай уҡ был ултырышта колхоздың тимерселәре лә, балта оҫталары ла ҡатнаштылар.

Хәҙер беҙҙә бесән һәм урожай йыйнауға әҙерлек көсәйтелде. Тимерселәрҙән Барый Хәбиров, Миңлеәхмәт Ғөбәйҙуллин иптәштәр ремонтта ярышып эшләйҙәр.

Колхозда хәҙер бесән сабыу кампанияһына әҙерлек эштәре теүәлләнде. Урожай йыйнау машиналарына ла ремонт эштәре тиҙ көндәрҙә тамамланасаҡ.

Х. Мостафин,
Маҡар районы Киров исемендәге колхоздың партия ойошмаһы секретаре.



Дәүләкән күргәҙмә-төрәк МТС-ы комбайндар ремонтлауҙың йыллыҡ планын тамамланы.
Һүрәттә: үҙе йөрөй торған комбайндарҙың ремонт сифатын тикшереү. Һулдан 3-сө — комбайндар ремонтлау буйынса механик иптәш В. Фадеев. Ул комиссия члендәренә ремонтланған комбайндарҙы күрһәтә. **А. Зарҙәв фотоһы.**

Мәскәүҙә бөйөк рус яҙыусыһы Максим Горькийға һәйкәл асыу

10 июнда Мәскәүҙә бөйөк рус яҙыусыһы Алексей Максимович Горькийға тантаналы рәүештә һәйкәл асыу булып үтте. Белорус вокзалының ҙур майҙанына һәм уға тоташҡан киң магистралдарға һәм тыҡрыҡтарға меңәрләгән мәскәүлеләр йыйналдылар. Бында баш қаланың бөтә район хеҙмәтсәндәренең делегаттары — завод һәм фабрикаларҙың Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, ғалимдар, яҙыусылар, артистар, юғары уҡыу йорттары студенттары һәм уҡыусылар, Совет Армияһының һәм хәрби-диңгеҙ флотының вәкилдәре, Мәскәүҙең партия һәм совет ойошмалары етәкселәре килделәр.

Баш өҫтөндә юғарыла — халыҡтың ярАтҡан яҙыусыһы коммунизм тантанаһы өсөн арымай-талмай көрәшеүсе, хеҙмәтсәндәрҙең бөйөк юлбашсылары В. И. Ленин һәм И. В. Сталиндең соратнике А. М. Горькийҙың йөҙәрләгән портреттары.

Йорт фасадтарында, Горькийҙең үлемһеҙ һүҙҙәре яҙылған ал полотнолар һәм транспаранттар.

17 сәғәт. СССР Совет яҙыусылар союзының генеральный секретаре А. А. Фадеев А. М. Горькийҙе иҫкә алыуға арналған митингте асты.

— Бөйөк Горькийҙең өлгөһө, — тине иптәш Фадеев үҙ телмәренең аҙағында, — беҙҙең бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин етәкселегендә беҙҙе коммунизмдең бөйөк һәм яҡты бинаһын төҙөүҙә арымай-талмай хеҙмәт итергә саҡыра. (Майҙан өҫтөндә иптәш И. В. Сталин хөрмәтенә оҙаҡҡа һуҙылған овация яңғырайы).

Иптәштәр! Совет Социалистик Республикалар Союзының Министрҙар Советы исеменән бөйөк рус яҙыусыһы Алексей Максимович Горькийға һәйкәл асам.

Иптәш Фадеев лентаны киҫә, һәйкәл өҫтөнән аҡ полотно төшә. Йыйналған халыҡтың күҙ алдына А. М. Горькийҙең бронзанан эшләнгән мәһабәт скульптураһы килеп баҫа.

Яҙыусының 5 метрлы фигураһы ҡымыртылған ҡыҙыл граниттан эшләнгән бейек постамент өҫтөнә урынлаштырылған.

Бөйөк Ватан һуғышына тиклем был һәйкәлде ижад итеүҙә күренекле скульптура мастеры И. Д. Шадр эшләй башлағайны. Уның ижади эшен СССР халыҡ художнигы В. И. Мухина, скульпторҙар З. Г. Иванова һәм Н. Г. Зеленская иптәштәр тамамланылар.

Яҙыусы бөтә буйы менән кәүҙәләндерелгән. Ул уң ҡулы менән таяҡҡа таянған һәм һул ҡулын кеҫәһендә тота. Алексей Максимовичтең иңһамланған йөҙө халыҡҡа ҡараған.

Пьедесталға алтын хәрефтәр менән түбәндәге һүҙҙәр яҙылған:

«Советтар Союзы
Хөкүмәтенән
Бөйөк
Рус яҙыусыһы
Максим
Горькийға
10 июнь, 1951 йыл».

Майҙан өҫтөндә көслө ҡул сабыуҙар. СССР Хөкүмәт Гимненең тантаналы көйө яңғырай. Сәскә букеттәре тотҡан йөҙәрләгән мәскәүлеләр һәйкәлгә юналәләр.

СССР Совет яҙыусылар Союзы исеменән яҙыусы Н. С. Тихонов һәм СССР фәндәр Академияһы исеменән академик В. В. Виноградов иптәштәр сығып һөйләнеләр.

Митинг тамамланды. Ләкин халыҡтар таралмай. Улар Алексей Максимович Горький һәйкәле эргәһендә оҙаҡ туҡталалар. Төнгә тиклем халыҡтар ағымы дауам итте.

10 июнда Белорус майҙанының скверында унар меңләгән мәскәүлеләр булдылар.

Бөртөклө ашлыҡтарҙың юғары урожайы

БАКУ, 8 июнь. (ТАСС). Муған яланының колхоздарында тиҫтәләгән комбайндар бойҙай урожайын йыйнайҙар. Беренсе һуғылған ашлыҡтар урожайҙың юғары булыуын күрһәтәләр. Масаллин районының Аҙи Асланов исемендәге ауыл хужалығы артелендә баҫыуҙарҙа 8 комбайн эшләй. «Сталинец — 6» агрегаттарын йөрөтөүсе ҡайһы бер комбайнерҙар һәр бер гектарҙан 22—24 центнер бойҙай алалар. Урожай йыйнау артынан ҡамыл төптәрен йомшартыу үткәрелә.

Астрахань-Базар районының Багиров исемендәге колхозында комбайн менән урожай йыйнау мастеры Н. Кудряшов 2 «Сталинец—6» комбайнын бергә тағып, тәүлек дауамында ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа арттырып үтәй. Бында һәр бер гектарҙан 26—28 центнер иген алына.

Республиканың иң ҙур совхозы — Орджоникидзе исемендәге совхозда 50 комбайн урожай йыйнай. Комбайнерҙар Адигеҙалов, Должанко һәм башҡа иптәштәр һәр бер гектарҙан уртаса алғанда 25 центнер бойҙай һуғып алалар.

ВКП(б) ӨЛКӘ КОМИТЕТЕ ПЛЕНУМЫ

7-8 июнда ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты пленумы булып үтте. Пленум түбәндәге мәсьәләләрҙе тикшерҙе:

1. Республиканың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә, урожай йыйыуға әҙерлектә һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында;

2. ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитетының эше тураһында.

Беренсе мәсьәлә буйынса доклад менән ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш **С. Ә. Ваһапов** сығыш яһаны.

Иптәш Ваһапов докладын буйынса фекер алышыуҙарҙа беренсе булып партияның Краснокам райкомы секретары иптәш **Вахитов** сығыш яһаны.

— Ауыл хужалығына етәкселек итеүҙәге, иптәш Ваһапов докладында күрһәтелгән етешһеҙлектәр, — тине иптәш Вахитов партияның Краснокам ойошмаһына ла ҙур дәрәжәлә ҡағыла. Район быйыл яҙғы сәсеүҙе һуҙҙы, таркаулыҡ, машина-трактор станцияларының һәм күпселек колхоздарҙың насар эшләүҙәре уның төп сәбәбе булып тора.

Ауыл хужалығына етәкселек итеүҙәге етешһеҙлектәр, — тине иптәш Вахитов, — шуның менән аңлатыла: Беҙ партияның эске эштәрен насар алып барабыҙ, ауыл хужалығына яңыса, квалификациялы етәкселек итеүгә өйрәнмәгәнбеҙ. Быға партияның Өлкә Комитеты ла, айырыуса уның инструкторҙар аппараты ла тейешенсә өйрәтмәй.

Иптәш Вахитов һүҙен йомғаҡлап былай тине: эштәге етешһеҙлектәрҙе иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бөтөрөү, колхоздарҙы ойоштороу яғынан нығытыу, юғары урожай үҫтереү, урожайҙы юғалтыуһыҙ урып-йыйыу һәм ауыл хужалығы продукттары тапшырыу буйынса государство менән срогынан алда иҫәпләшеү өсөн, райондың партия ойошмалары бөтә сараларҙы күрәсәк.

Партияның Дәүләкән райкомы секретары иптәш **Масленников** үҙенең сығышында, бөтәһенән дә элек, эреләтелгән колхоздарҙа ер төҙәлеше мәсьәләләренә туҡталды. Колхоз башлыҡтарының урожайлылығын арттырып күтәреү шул мәсьәләне хәл итеүгә бәйләнгән. Ләкин был эштәр, — тине ул, — Ауыл хужалығы министерствоһы тарафынан бик аҡрын һәм ҡыйыуһыҙ хәл ителә. Район ауыл хужалығы бүлеге эреләтелгән 11 колхоз буйынса бөтә документтарҙы эшләп бирҙе, ләкин уларҙы раҫламайҙар һәм улар буйынса заключение бирмәйҙәр. Әгәр ҙә беҙ ер төҙәлеше эштәрен һуҙһаҡ, ул ваҡытта киләсәктә культураларҙы дөрөҫ урынлаштырыу мөмкин булмаясаҡ. Ер төҙәү эшен һуҙыу сетерәс эҙемтәләр килтереү ҡурҡыныс бар һәм партияның Өлкә Комитеты колхоздар эсендә ер төҙәлеше мәсьәләләренә йөрөнтөләрәк контроль булдырырға тейеш. Унан һуң иптәш Масленников районда общественный малсылыҡты үҫтереү тураһында һөйләне. Ағымдағы йылда билдәләнгән минимум малдың бөтә төрө буйынса ла үтәлә. Ләкин, — тине ул, — быны менән тынысланыу дөрөҫ булмаҫ әле. Малсылыҡ эшендә ҙур етешһеҙлектәр бар. Нығыу аҙыҡ базаһы булдырыу эше йомшаҡ алып барыла, малдарҙың продукт биреүсәнлеге аҡрын күтәрелә һәм тоҡом эше насар ҡуя. Партия ойошмалары хәҙер малсылыҡ мәсьәләләре менән ныҡлы шөғөлләнә.

Иптәш Масленников үҙенең сығышында эреләтелгән колхоздарҙың партия ойошмаһы секретарҙары тураһындағы мәсьәләне күтәрә. Райондың эреләтелгән ҡайһы бер колхоздарына 6, 8, 10 һәм 12 ауыл инә һәм 5 мең гектарҙан алып 12 мең гектарға тиклем ер майҙаны бар. Был айырыуса асыҡ һәм конкрет етәкселек итеүҙе, партия ойоштороу һәм партия-политик эште етәксе кадрҙар араһында, шулай уҡ колхозсылар массаһы араһында ла көсәйтеүҙе талап итә.

Колхоздарҙы эреләтеү менән, — тине иптәш Масленников, — партия ойошмалары ла эреләнделәр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан партия-ойоштороу һәм партия-политик эштең кимәле түбән һәм барған һайын уҫа барған бурыстарға яуап бирмәй әле. Колхоз партия ойошмаларында секретарҙарҙың составын нығытырға кәрәк.

Эреләтелгән колхоздарҙа партия ойошмаһы секретары башҡа эштәрҙән бушатылырға тейеш. Был бик мөһим мәсьәлә һәм ул тейешле партия органдарының ҡыҫҡатмайынса хәл итеүҙәрен талап итә.

Иптәш Масленников бөртөклө ашлыҡ совхоздары трестының етәкселәрен тәнҡитләне. Улар Дәүләкән бөртөклө ашлыҡ совхозындағы мәсьәләне хәлде, совхоздың кадрҙарын белмәйҙәр һәм уларҙы иҫтибар менән һайлап алмайҙар, совхозға тикшерелмәгән кешеләр ебәрәләр.

Унан һуң фекер алышыуҙарҙа ВКП(б)-ның Баймаҡ райкомы секретары иптәш **Ғәбитов** сығыш яһаны. Райондың ауыл хужалығы эштәрендә, — тине ул, — яҙғы сәсеү эштәрен байтаҡ ойошҡан рәүештә үткәрҙеләр һәм шуға күрә районның колхоздары һәм совхоздары сәсеүҙе үткән йылға ҡарағанда бик күп иртә һәм юғары агротехник кимәлдә үткәрҙеләр.

Был бурысты уңышлы хәл итеү, — тине иптәш Ғәбитов, — күп дәрәжәлә партия кадрҙарын урынлаштырыуға, ауыл партия ойошмаларының ойоштороу-партия һәм массовый-политик эштәренең дөрөҫ ҡуйылыуына бәйле булды. Ауыл хужалығында 579 коммунист эшләй, шуларҙан 373 кеше туранан-тура басыу эштәрендә ҡатнаштылар. Басыусылыҡ һәм трактор бригадаларында 27 урында партия һәм партия-комсомол группалары төҙөлдө. 405 агитатор аңлатыу эштәре алып барҙы. Пәҙрәләгән трактористар, һабансылар һәм тырмасылар социалистик ярышта ҡатнаштылар.

Ләкин яҙғы сәсеү барышында, — тине иптәш Ғәбитов, — сетерәс етешһеҙлектәр ҙә булды: ужым культураларын тырматыу тулыһынса үткәрелмәне, арҡыры-буй сәсеү планы үтәлмәне. Ағас ултыртыуҙың йыллыҡ планы тулманы.

Районда урожай йыйыуға һәм ауыл хужалығы продукттары әҙерләүгә әҙерлек насар бара. Партия райкомы сәсеү ваҡытында был мәсьәләләргә иҫтибарҙы йомшартты. Ауыл хужалығы алдынғыларының май айында булып үткән кәңәшмәһендә колхозсылар һәм МТС эшселәре урып-йыйыу машиналарын ремонтлауҙы 15 июлгә, ашлыҡ ырҙын табаҡтарын ремонтлауҙы 5 июлгә тамамларға йөкләмә алдылар.

Иген әҙерләүҙең уңышлы барыуы, — тине унан һуң иптәш Ғәбитов, — район ойошмаларының оператив етәкселек итеүҙәренә генә бәйләнмәгән, бәлки өлкә ойошмаларының да, атап әйткәндә, «Заготзерно»ның да етәкселегенә һәм ярҙамына бәйләнгән. Райондың колхоздары һәм совхоздары эске пункттарға күп һанда иген тапшыралар. Ләкин Заготзерно эске пункттарҙы яңы урожай игенен ҡабул итеүгә әҙерлектә ярҙам күрһәтмәй.

БАССР Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары иптәш **Ғатауллин** үҙенең сығышында республика колхоздарының үҙҙәрендә орлоҡ базаһы булдырыу мәсьәләһенә туҡталды. Ҡайһы бер райондар орлоҡ менән бик ауыр хәлдә ҡалыуҙарына ҡарамаҫтан, — тине ул, — Архангель, Салауат, Ауырғазы һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙа орлоҡ участкаларын бүлеү менән сәсеү тамамланғас ҡына шөғөлләнә башланылар. Оло Теләк районының күп кенә колхоздарында орлоҡ участкаларында сәсеү ябай орлоҡтар менән үткәрелгән, шул уҡ ваҡытта производство участкаларына сортлы орлоҡтар сәселгән.

Орлоҡ участкаларының урожайын ваҡытында йыйып алмау һәм һуҡмау орлоҡсолоҡ эшендә ҙур етешһеҙлектәрҙең береһе булып тора, һөҙөмтәлә орлоҡто күп юғалтыуға юл ҡуйыла.

Унан һуң иптәш Ғатауллин общественный малсылыҡты үҫтереү, малдарҙың продукт биреүсәнлеген күтәреү, малсылыҡ торлаҡтары төҙөү тураһында һөйләне. Быйыл малсылыҡ торлаҡтары төҙөү насар бара һәм төҙөлөш эштәрен йәйге һәм көҙгә айҙарға киселтереү, күп колхоздарҙа төҙөлөш бригадаларының ойошторолмауы быны төп сәбәбе булып тора. Ауыл хужалығы министерствоһы, күп райондарҙың ауыл хужалығы бүлектәре һәм машина-трактор станциялары колхоздарҙағы төҙөлөш эштәренән ситләшкәндәр, уға етәкселек итмәйҙәр. Ауыл һәм колхоз төҙөлөше управлениеһы ныҡышмалы эшләмәй, общественный малсылыҡ өсөн көрәшмәй, работниктарҙы малсылыҡ торлаҡтары төҙөүҙең государство планын үтәүгә мобилизацияламай.

Унан һуң ВКП(б)-ның Әлшәй райкомы секретары иптәш **Чурсин** сығыш яһаны.

—Докладта,—тине ул,—Әлшәй районы юғары урожай алыуға өлгәшмәй, башҡа райондарҙан артта ҡала тип дөрөҫ күрһәтелде. Быйыл беҙ юғары урожай алыу өсөн күп саралар үткәрҙек һәм бындай урожайҙың алыныуына шик юҡ.

Районда бер колхозсыға хеҙмәт көнө эшләү түбән, үткән йыл ул 218 хеҙмәт көнө тәшкил итте. Был һис һүҙһеҙ бик насар. Быйыл общественный хеҙмәттә колхозсыларҙың активлеген күтәреү саралары күрелә.

Унан һуң иптәш Чурсин эреләтелгән колхоздарҙағы партия ойошмаһы секретарҙары тураһындағы мәсьәләне хәл итергә кәрәк, тине. Практика шуны күрһәтә, тине ул, партия ойошмаһының секретары туранан-тура колхоз производствоһында эшләгән, бөтә эште белеп торған урында партия эше лә яҡшы бара. Ә партия ойошмаһының секретары колхоздың производство эшендә туранан-тура ҡатнашмаған урында массаға партия-политик йоғонтоноң кимәле лә түбән була.

Иптәш Чурсин Ауыл хужалығы министерствоһының пропаганда управлениеһен, уның йоғонтоһо һәм эше урындарҙа тойолмай, — тине.

ВКП(б)-ның Ҡырмыҫҡалы райкомы секретары иптәш **Шәйәхмәтов** үҙенең сығышында былай тине:

Быйыл директоры иптәш Паромонов булған Ҡырмыҫҡалы МТС-ы айырыуса насар эшләне. Был МТС-та яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙә етешһеҙлектәр ҙур булды, пар һөрөү, урып-йыйыу машиналарын ремонтлау планлары йомшаҡ үтәй. МТС пар һөрөү планын 5 июнгә 24 процентка ғына үтәне.

Ләкин Ауыл хужалығы министерствоһы, — тине иптәш Шәйәхмәтов, — машина-трактор станцияларының шулай насар эшләүенә тейешле иҫтибар бирмәй, уның артта ҡалыуының сәбәптәрен урында тикшермәне. МТС-тың етәксе һәм механизаторҙар кадрҙарының тейешенсә комплектовать ителмәүе был сәбәптәрҙең береһе булып тора. Был мәсьәлә буйынса райондан бер нисә тапҡыр белдереү булһа ла Ауыл хужалығы министерствоһы бер нинди сара күрмәй.

Урожай йыйыуға әҙерлектә, тине иптәш Шәйәхмәтов, Башпотребсоюз насар ярҙам итә, ул үҙенең ауылдағы магазиндарын ҡул көсө менән урып-йыйыу инвентарҙары, машиналар ремонтлау өсөн металл менән тәьмин итмәй. Урактар һәм токтар бик аҙ һанда килтерелгән.

Район партия ойошмаһы, — тине иптәш Шәйәхмәтов, — бөтә партия-ойоштороу эшен ауыл хужалығын артабан күтәреү, колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу буйынса партия Үҙәк Комитеты тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы хәл итеүгә йүнәлтә. Ҡырмыҫҡалы районына ҡарата булған тәнҡит дөрөҫ һәм район партия ойошмаһы күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн үҙенең бөтә көсөн мобилизациялар, иген һәм башҡа ауыл хужалығы продукттары тапшырыуҙы уңышлы үткәреүгә өлгәшер.

Унан һуң фекер алышыуҙарҙа Ауырғазы район Советы исполкомы председателе иптәш **Ғәликәев** сығыш яһаны. Үткән йыл райондың колхоздары, — тине ул, — яҡшы урожай үҫтерҙеләр, государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда үтәнеләр һәм үҙҙәрен орлоҡ менән тәьмин иттеләр. Яҙғы сәсеү ҡыҫҡа сроктарҙа үткәрелде, сәсеү майҙандары, атап әйткәндә: бойҙай сәсеүлектәре бик ҙурка артты. Колхозсылар арыштың һәр гектарынан кәмендә 105 бот, бойҙайҙан — 100 бот, шәкәр сөгөлдөрөнән 170 центнер урожай алырға һүҙ бирҙеләр. Айырым колхоздар бынан да юғарыраҡ йөкләмәләр алдылар.

Унан һуң иптәш Ғәликәев районға өлкә ойошмаларының ярҙамы тураһында һөйләне. Ете йыл эшләү ваҡытында, — тине ул, — районда ауыл хужалығын күтәреү мәсьәләһе менән шөғөлләнеү өсөн бер генә специалист тә килмәне. Районда баҫыусылыҡ станцияһының работниктары булмайҙар, улар күп йыллыҡ үлән сәсеү, агротехника сараларын үткәреү һәм башҡа шундай күп мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ярҙам күрһәтә алырҙар ине.

Малсылыҡта күп етешһеҙлектәр бар әле, — тине иптәш Ғәликәев. — Районыбыҙ, дала районы булараҡ, төҙөлөш материалдарына мохтаж. Ләкин ауыл һәм колхоз төҙөлөше управлениеһы бөтөнләй насар сифатлы материалдар әҙерләне. Саман ҡаралтылар булдырыу эше насар алып барыла.

СССР Хөкүмәте эргәһендә колхоздар буйынса Советтең Башҡорт АССР-ындағы вәкиле иптәш **Жуков** үҙенең сығышында колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу һәм ауыл хужалығы артеле Уставын срока еткерел үтәү мәсьәләләренә туҡталды.

Иптәш Жуков бөтәһенән дә элек колхоздарҙың аҡса доходтары һаман да түбән булыуына, колхоздарҙың приход-расход сметаларының доход өлөшөнең насар үтәлеүенә иҫтибарҙы йүнәлтә. Быны Туймазы, Миәкә һәм башҡа райондарҙың тикшерелгән күп кенә колхоздарында күреп була.

Доход буйынса хәлдең ҡәнәғәтләнерлек булмауы күп кенә колхоздарҙың бөртөклө ашлыҡ һәм техник культуралар урожайын күтәреү пландарын үтәмәүҙәренән, общественный малсылыҡты насар үҫтереүҙәренән, малдарҙың продукт биреүсәнлеген күтәреү, хужалыҡтың йәшелсәселек, баҡсасылыҡ кеүек тармаҡтарын үҫтереү буйынса етәрлек саралар күрмәүҙәренең һөҙөмтәһе булып тора.

Шуға кәңгә тиклем ауыл хужалығы Уставын боҙоуҙар, колхоз ерҙәрен, биналарын, малдарын, аҡса средстволарын законһыҙ файҙаланыу бөтөрөлмәгән.

Идара итеү аппаратын тотоуға расходтар бик күп тотола әле. Был аппаратты тотоу өсөн 1949 йылда хеҙмәт көндәренең дөйөм һанының 7 проценты тотолған булһа, 1950 йылда ул расходтар 6 процент тәшкил итте. Өфө районының «Парижская коммуна» колхозында, Миәкә районының күп кенә колхоздарында колхоз иҫәбенә ауыл Советының дежурныйҙары, пожарниктар һәм колхоз производствоһына бер ниндәй ҙә ҡатнашлыҡтары булмаған бик күп кешеләр тотолалар.

Маҡар районы колхоздарында айырым кешеләр тарафынан да, колхозсылар тарафынан да, шулай уҡ ойошмалар һәм учреждениелар тарафынан да ерҙән файҙаланыу буйынса боҙоуҙарҙың бик күп фактарын килтерергә мөмкин. Был колхоздарҙа колхоздарҙың һөрөнтө ерҙәрен законһыҙ алыуҙың 71 ваҡиғаһы беленде.

Унан һуң иптәш Жуков колхоздарҙың дебиторлыҡ бурыстары бер аҙ кәмеһә лә, ул колхоздарҙың дөйөм доходтарының 8 процентын тәшкил итә, — тине. — Бурыстар иҫәбенә әҙерләү һәм кооператив ойошмалары, МТС-тар һәм учреждениелар инәләр.

Колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыу һәм уларҙың төп производство бурыстарын хәл итеү был бурыстарҙы дөрөҫ, ваҡытында һәм аныҡ үтәүгә бәйләнгән.

Унан һуң фекер алышыуҙарҙа партияның Бөрө райкомы секретары иптәш **Русанов** сығыш яһаны.

Ауыл хужалығына етәкселек итеү эшендәге етешһеҙлектәр, — тине ул, — Бөрө районына ла ҡағылалар. Үткән йыл райондың колхоздары яҡшы урожай алдылар. Мал һаны байтаҡ артты, ләкин районда колхоздарҙың доходлылығы 1949 йылға ҡарағанда кәм булды.

Төп сәбәп, — тине иптәш Русанов, — шунан тора: партия район комитеты һәм райсовет исполкомы был мәсьәлә менән ныҡлап шөғөлләнмәнеләр, уны район ауыл хужалығы бүлеге работниктарына ғына тапшырҙылар. Был етешһеҙлекте район партия конференцияһы күрһәтте. Райком эште төҙәтә. Производство-финанс пландары райсовет исполкомы тарафынан ҡаралып раҫланды. Колхоздарҙың баҫыусылыҡ, малсылыҡ һәм ярҙамсы предприятиелар буйынса доходлылығы бик ентекләп ҡаралды, тейешле контроль булдырылды. Был мәсьәләләр колхоз правлениеларының ултырыштарында, колхозсыларҙың йыйылыштарында тикшерелә.

Унан һуң иптәш Русанов кәк һағыҙ һәм картоф кеүек күп хеҙмәт һалыуҙы талап итә торған культураларҙы эшкәртеүҙе механизациялаштырыу тураһындағы мәсьәләне ҡуйҙы. Был культуралар райондың колхоздарында ҙур урын алып тора. Был культураларҙы эшкәртеү ҡул көсө менән башҡарыла, был күп һанда эш көсө талап итә һәм ҙур юғалтыуҙарға килтерә, айырыуса кәк һағыҙ орлоҡтоп йыйғанда юғалтыуҙар күп була.

Был культураларҙы эшкәртеүҙе механизациялаштырыу тураһындағы мәсьәлә Ауыл хужалығы министерствоһы алдына бер нисә тапҡыр ҡуйылды, ләкин ул был мәсьәләлә ҙур хәстәрлек күрһәтмәне.

Иптәш Русанов эреләтелгән колхоздарҙың тәүге партия ойошмаһы секретарҙарына ҡарата иҫтибар кәрәклек тураһында Масленников һәм Чурсин иптәштәрҙең сығыштарын яҡланы. Эреләтелгән колхоз партия ойошмаларының секретарҙарына 6 айлыҡ ҡыҫҡа булһа ла курстар ойоштороорға кәрәк. Был уларға колхоздарға партия эшен үҙләштерергә һәм яҡшыртырға ярҙам итер ине.

Партияның Ғафури райкомы секретары иптәш **Гәрәев** үҙенең сығышында райкомдың ауыл хужалығына етәкселек итеүе ғәҙел тәнҡитләнелде, — тине. Беҙ әле, — тине ул, — хеҙмәткә яраҡлы бөтә колхозсыларҙың бөтә ауыл хужалығы эштәрен уңышлы башҡарыу өсөн колхоз производствоһында актив ҡатнашыуҙарына өлгәшә алманыҡ. Был район партия ойошмаһының колхозсылар араһында массовый-политик эште яҡшыртырға алмауы менән аңлатыла. Хәҙер партияның район комитеты колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһын күтәреү, коммунистарҙы колхоз производствоһының хәл иткес участкаларына урынлаштырыу мәсьәләләренә сетерәс иҫтибар бирә.

Партия һәм хөкүмәтебеҙҙең ғәйәт ҙур ярҙамы арҡаһында, — тине, — унан һуң иптәш Гәрәев, — райондың ауыл хужалығы бер ни тиклем яҡшырҙы. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта колхоздарҙа сәсеү майҙандары 30 проценттан күберәккә артты, ауыл хужалығы культураларының урожайлылығы күтәрелде. Райондың колхоздары быйыл сәсеү өсөн үҙҙәрен сәсеү орлоғо менән тулыһынса тәьмин иттеләр.

Малдар һаны байтаҡ артты. Беренсе йөнтә аттар һанын үҫтереү планы — 103 процентҡа үтәлде, һарыҡтар буйынса ла план арттырып үтәлде. Ләкин мөгөҙлө эре малдар һанын үҫтереү планының үтәлмәүе малсылыҡта ҙур етешһеҙлек булып тора.

Унан һуң иптәш Гәрәев Ауыл хужалығы министерствоһының етәкселегендәге етешһеҙлектәр тураһында һөйләне, улар машина-трактор станцияларында нимә эшләнеүен белмәйҙәр, ә шул уҡ ваҡытта улар ауыл хужалығын үҫтереүҙә хәл иткес әһәмиәт ҡаҙаналар. Яңы ойошторолған Яңғыҙ ҡайын МТС-ының тракторҙарҙы ремонтлау өсөн бинаһы ла, станоктары ла, иң кәрәкле оборудованиелары ла юҡ. Машина-трактор станциялары тимер юлынан һиҙеүҙәр менән бүленгәндәр, был айырыуса аҙ көнө һиҙелә. Ләкин улар яғыулыҡ ташыу өсөн тейешле һауыт менән тәьмин ителмәгәндәр.

Унан һуң фекер алышыуҙарҙа партияның Иглин райкомы секретары иптәш **Фролов** сығыш яһаны.

— Иглин районы, — тине ул, — сәсеү планын үтәмәүсе райондар иҫәбенә инә. Партия райкомы һәм район партия ойошмаһы быйыл яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алманылар, сәсеүҙең беренсе көндәренән үк тейешле ныҡышмалылыҡ булдырып һәм яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙең тейешле темптарын тәьмин итә алманылар.

Районда картоф, йәшелсә һәм тамыр аҙыҡтар кеүек күп көс һалыуҙы талап итә торған культуралар ҙур урын алып тора. Уларҙы сәсеү иһә ҡул көсө менән генә башҡарыла. Ауыл хужалығы министерствоһы һәм МТС специалистары күп көс һалыуҙы талап итә торған эштәрҙе механизациялаштырыу өсөн алдан сара күрмәйҙәр.

Районда сәсеүҙең һуҙылыуы тракторҙарҙың насар эшләүе менән аңлатыла һәм быны өсөн Өфөләге ремонт заводы ла ғәйепле. Сәсеү алдынан Ауыл хужалығы министерствоһы дизель тракторҙарынан яғыулыҡ аппаратын алырға һәм ремонт өсөн заводҡа тапшырырға күрһәтмә бирҙе. Асылда, был аппараттар МТС-ҡа ремонтланмаған көйөнсә кире ҡайтарылдылар һәм дизель тракторҙары эшләй алманылар.

Иглин районында Охлебинин МТС-ы насар эшләй. Был мәсьәлә буйынса тәнҡит дөрөҫ булды, ВКП(б) район комитеты, етәксе кадрҙарҙың булмауы МТС-тарҙың насар эшләүҙәренең төп сәбәбе булып тора, тип иҫәпләй. МТС-ҡа етәкселек итеү өсөн ойоштороу эшен алып бара алмаслыҡ работниктар ебәрелгән. Ауыл хужалығы министерствоһы иһә МТС-ҡа ярҙам итеү урынына әкенсе МТС-ҡа директор итеп ҡуйыу һылтауы аҫтында директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫарын алды һәм уны. МТС етәкселеге тураһындағы мәсьәләне хәл итмәйенсә, уҡырға ебәрҙе.

Доклад буйынса фекер алышыуҙа сығыш яһап, БАССР Министрҙар Советы председателе иптәш **Уразбаев** былай тине:

— Быйыл яҙғы сәсеү, үткән йылдарға ҡарағанда ҡырҡа айырылып торған шарттарҙа үтте. Шуға күрә яҙғы сәсеү осоронда булған ҡайһы бер уңышлылыҡтар күп кенә райондарҙың һәм колхоздарҙың эшендәге етешһеҙлектәрҙе ҡаплай алмай. Тотош республика буйынса сәсеү планы үтәлһә лә, айырым райондар сәсеүҙе һуҙҙылар һәм планды үтәмәнеләр. Сәсеү планы айырым культуралар буйынса үтәлмәгән.

Сәсеү планын үтәмәүҙә һәм уны һуҙыуҙа төп сәбәптәрҙең береһе—сәсеү орлоҡтарының алдан етерлек тиклем әҙерләнмәүендә. Күп кенә район етәкселәре ҡышҡы осорҙа орлоҡ тураһында тейешле хәстәрлек күрмәнеләр, ә уларҙың ҡайһы берҙәре был мөһим мәсьәләлә формаль-бюрократик ҡарашҡа юл ҡуйҙылар. Дыуан, Мәсетле, Благовещен, Бәйкибаш, Оло Теләк, Бөҙәй райондарының етәкселәре колхоздарҙы орлоҡ менән тәьмин итеү эшенә айырыуса ғәмһеҙ ҡаранылар.

— Сәсеүҙең барышында, — тине иптәш Уразбаев, — икенсе сетерәс етешһеҙлек булып, машина-трактор станцияларының насар эшләүе тора. Бер шартлы тракторға ер эшкәртеү буйынса, үткән йылға ҡарағанда, Архангель, Шаран, Бүрле, Ҡырмыҫҡалы, Стәрлетамаҡ, Ярослав, Ҡыйғы, Охлебинин МТС-тары бигерәк тә артҡа ҡалалар.

— МТС-тарҙың ҡәнәғәтләнмәслек эшләүҙәренең сәбәбе, — тине иптәш Уразбаев, — техниканы юғары етештереүсәнле итеп файҙаланыуға ауыл хужалығында бөтә эштәрҙең дә үҙ ваҡытында үткәрелеүе ныҡ бәйләнгәнен аңламағанға күрә, ҡайһы бер район етәкселәренең МТС-тың әҙерлеген ентекләп тикшермәүҙәренән, уның эшен ныҡлап өйрәнмәүҙәренән, уларға тейешле ярҙам күрһәтмәүҙәренән тора.

МТС директорҙары һәм уларҙың политик эштәр буйынса урынбаҫарҙары машиналарҙы максималь файҙаланыуға МТС коллективын ҡәнәғәтләнерлек мобилизовать итмәйҙәр, алдынғы тәжрибәләрҙе индереү менән шөғөлләнмәйҙәр, хеҙмәттә насар дисциплинаға һәм эштә провал яһау ваҡиғаларына килешеп ҡарайҙар. Был өлкәлә, — тине иптәш Уразбаев, — Ауыл хужалығы министерствоһының МТС-тар управлениеһы һәм министерство үҙе лә етешһеҙлектәргә юл ҡуя.

Унан ары иптәш Уразбаев ағас ултыртыу планының үтәлмәүен ҙур етешһеҙлектәрҙең береһе итеп күрһәтеп үтте. Ҡайһы бер райондар — Әбйәлил, Кейәргәҙе, Әлшәй, Шишмә, Бәләбәй, Хәйбулла, Матрай, Мәләүез, Миәкә — государство әһәмиәтендәге ошо мөһим сараны үтәүҙе әҙәләр.

Хәҙер ултыртылған ағастарҙы яҡшылап тәрбиәләү һәм уларҙы һаҡлап алып ҡалыу ҙур бурыстарҙың береһе булып тора. Урман полосаларының һирәклек кимәлен билдәләп көҙ көнө, быйыл ғына түгел, үткән йылдарҙа ултыртылған урман полосаларында ла тулыландырыу эшен үткәрергә кәрәк. Был эште кисектерергә ярамай. Колхоздар һәм совхоздар көҙ ултыртыу эшенең бөтә яҡтарын хәҙерҙән үк уйларға, алдан уҡ ағас орлоҡтары һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы, шулай уҡ ағас ултыртыу майҙандарын әҙерләп ҡуйырға тейештәр.

Иптәш Уразбаев мал аҙығы әҙерләү һәм иген йыйыуға әҙерлек эштәрен тиҙ көндә тамамлау мәсьәләләренә туҡталды. Бөтә был эштәрҙе иген йыйыуға төшкәнгә тиклем уңышлы башҡарырға мөмкин, тик быны өсөн колхоздарҙа булған хеҙмәт резервтарын юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланырға кәрәк.

Быйыл республикабыҙҙың бөтә колхоздарында һәм совхоздарында ла, — тине иптәш Уразбаев үҙенең сығышын тамамлап, — ауыл хужалығы культураларынан юғары урожай алырға мөмкинлек бар. Партия һәм совет ойошмаларының бурысы бөтә колхозсылар, машина-трактор станцияларының һәм совхоздарҙың работниктары араһында социалистик ярышты киң йәйелдереүҙе, социалистик ярыштың барышына өҙлекһеҙ етәкселек итеүҙе, юғары урожай алыу өсөн көрәштә бөтә булған бай резервтарҙы һәм мөмкинлектәрҙе асып тулыһынса файҙаланыуҙы, государствоға ауыл хужалығы продукттары тапшырыу йөкләмәһен срогынан алда үтәүҙе тәьмин итеүҙән тора.

СССР Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡортостан буйынса вәкиле иптәш **Валиев** фекер алышыуҙа сығыш яһап, яңы урожайҙы ҡабул итеү өсөн материаль-техник базаны әҙерләү эшенә туҡталды. Уҙған йылда Заготзерноның Башҡортостан контораһы, — тип билдәләне иптәш Валиев, — игендәрҙе ҡабул итеүгә насар әҙерләнде. Хәҙер ҙә ҡайһы бер пункттар, мәҫәлән, Туймазы, Мәләүез, Благовар пункттары һәм башҡалар склад тарҙы ремонтлау эшендә бик ныҡ артта ҡалалар. Был артта ҡалыуҙың төп сәбәбе әҙерләү ойошмаларының ныҡышмалы эш алып бармауҙарынан һәм ҡайһы бер райондарҙың уларға эшсе көсө менән тейешенсә ярҙам итмәүҙәренән килә. Бәләбәй, Бөрө, Кушнаренко Стәрлетамаҡ, Шаран һәм Баҡалы райондары склад тарҙы ремонтлау өсөн бер кеше лә бирмәнеләр.

Иптәш Валиев ҡайһы бер райондарҙың, бигерәк тә Балтас, Мишкә, Саҡмағош, Кушнаренко, Тәтешле һәм башҡаларҙың иҫтибарын юлдарҙың насар хәлдә булыуына йүнәлтә, сөнки юлдарҙың насар булыуы иген ташыуҙы ауырлаштыра.

Ҡаралған мәсьәлә буйынса пленум киңәйтелгән ҡарар ҡабул итте.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Колхоз клубтарына иғтибарһыҙ ҡараш

Хеҙмәтсәндәрҙең идея-политик культура кимәлен күтәреүҙә клуб уҡыу өйҙәре ҙур роль уйнайҙар. Ләкин Учалы районында был мөһим эшкә иғтибар бирелмәй. Райондың колхоздарындағы ҡайһы бер клубтар иген келәтенә әйләндерелгән. Быға миҫал итеп «Урал», «Большевик», «Правда», Ворошилов исемендәге колхоздарҙың клубтарын алып күрәк.

«Урал» колхозы территорияһындағы Ҡотой, Ҡолош ауылдарының клубтарында ла 1950 йылдың сентябренән бирле иген һаҡланыла. Сорағол ауыл клубы менән дә шундай уҡ хәл. Ә Ҡалуй ауыл клубы бөтөнләй емерек хәлендә. Уның тәҙрәһе, сәхнәһе ремонт талап итә. «Правда» колхозының председателе беренсе бригадалағы (Байрамғол ауылы) клубтың фанеранан эшләнгән сәхнәһен күтәреп алдырҙы ла, шуның менән уның кашовкаһын ремонтлатты. Ошо уҡ колхоз территорияһындағы Көҙәй ауыл клубының эшендә лә етешһеҙлектәр күп.

Ләкин былдағы етәкселәр колхоз клубтарын үҙ линияһы буйынса файҙаланыу тейеш булмағандарын ремонтлатыу тураһында күҙгә күренерлек конкрет бер сара ла күрмәйҙәр. Тейешле ойошмалар был етешһеҙлектәргә иғтибар бирергә, клубтарҙың эшен хеҙмәтсәндәрҙең һорауына яуап бирерлек итеп ҡуйыуға конкрет практик эш алып барырға тейештәр.

Р. Әхмәтьянов.

Стадионды төҙөкләндереү тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр

Баймаҡ район үҙәгендәге «Спартак» спорт обществоһы ике футбол һәм волейбол уйнау командаһынан тора. Был командалар йыш ҡына, райондар араһында үткәрелгән спорт ярыштарында алдынғылыҡты яулап алалар.

Ләкин бындағы стадион спорт һөйөүсе йәштәрҙең һорауына яуап бирә алмай. Сөнки уға ремонт үткәрелгәне юҡ. Стадиондың тирә-яғы ҡойма менән уратып алынмаған. Шуңлыҡтан ағастарҙы ашап, таптап бөтәрә. Шулай уҡ спорт ярышында ҡатнашыусыларҙы хеҙмәтләндереү өсөн кәрәк булған умывальник, һыу, таҫтамал һәм башҡалар булдырылмаған.

Стадионға капиталь ремонт үткәреү һәм яңынан ағас ултыртыу тураһында күп кенә ҡарарҙар сығарылған булһа ла, әлегә тиклем конкрет бер нәмә лә эшләнгәне юҡ. Заводтың коммуналь бүлеге начальнигы Макаров һәм поссовет председателе Хәйбуллин иптәштәр бы етешһеҙлектәргә килешеп ҡарайҙар, стадионды төҙөкләндереү тураһында конкрет бер сара ла күрмәйҙәр.

Беҙ тейешле ойошмаларҙың «Спартак» спорт стадионының эше менән ҡыҙыҡһыныуҙарын һәм уны йәштәрҙең һорауына яуап бирерлек итеп ҡороуҙа һәм сараларҙы күреүҙәрен талап итәбеҙ.

К. Кәримов.

ЙӘШТӘРҘЕҢ ТАЛАБЫ

Помарҙуа районының бөтә мәктәптәрендә лә физкультура дәрестәре түбән кимәлдә алып барыла. Ете йыллыҡ мәктәптәрҙә физик тәрбиә эштәре педагогик белемдәре булмаған кешеләргә тапшырылған. Волостновка, Тләүмбәт һәм Ғәйлелловка ете йыллыҡ мәктәптәрендә физкультура эштәре айырыуса йомшаҡ ҡуйылған. Физкультура уҡытыусылары был эштәренә һалҡын ҡарайҙар, белемдәрен күтәреү өсөн тырышмайҙар.

Район үҙәгендәге физкультура залы ташландыҡ хәлдә, спорт инвентары юғалып бөткән. Район үҙәгенең урта мәктәптәрендә лә шундай уҡ хәл. Физкультура һәм спорт эштәрен ойоштороп ебәрергә бында бөтә мөмкинлектәр ҙә бар һәм уның өсөн средство ла сарыла. Ләкин район физкультура һәм спорт комитеты председателе иптәш Шевцов был эшендә яуапһыҙлыҡ күрһәтә. Шуның һөҙөмтәһендә районда физик тәрбиә эше ағышына ҡуйылған.

Районда «Искра» һәм «Колхозник» спорт обществолары ла ойошторолған, ләкин уларға ла бер ниндәй ҙә эш алып барылмай.

Ә. Исаков.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Беҙ ҡапсыкта ятмай"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 33-сө номерында Ғафури районы Ерек ауыл Советы председателе Нәғәмәновтың үҙенә тапшырылған эшкә яуапһыҙ ҡарауы һәм колхоз малын туҙҙырыуға юл ҡуйыуы тураһында фельетон баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Ғафури район комитеты редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Беҙ ҡапсыкта ятмай» тигән фельетон райкомдың бюро ултырышында тикшерелеп, унда күрһәтелгән фактар урынлы тип табылды. Һәр ваҡыт эскелек менән шөғөлләнгәне, эш менән йомшаҡ етәкселек иткәне өсөн Ерек ауыл Советы исполкомының председателе иптәш Нәғәмәновҡа шелтә бирелде. Государство аҡсаһын әрәм-шәрәм итеүсе Хисаметдинов (Ерек ауыл Советы исполкомының элекке секретаре) өҫтәнән материал төҙөлеп суд органына тапшырылды».

ЯПОНИЯ МЕНӘН ЯРАШЫУ ДОГОВОРЫ ТУРАҺЫНДА АҠШ ХӨКҮМӘТЕНӘ СССР ХӨКҮМӘТЕНЕҢ НОТАҺЫ

Ошо йылдың 19 майында АҠШ Государство департаменте СССР-зың АҠШ-тағы Посолы А. С. Панюшкинға Меморандум тапшырҙы. Унда «Япония менән Ярашыу договорының АҠШ проекты айҡанлы СССР Хөкүмәтенең 7 майзағы иҫкәрмәләренә» АҠШ Хөкүмәтенең яуабы бар.

10 июнда СССР Сит Ил Эштәре Министрының Урынбасары В. А. Зорин АҠШ-тың СССР-ҙағы Посолы А. Керк әфәндегә Япония менән ярашыу договоры тураһында АҠШ Хөкүмәтенә СССР Хөкүмәтенең АҠШ Хөкүмәтенең юғарыла күрһәтелгән Меморандумына яуап нотаһын тапшырҙы.

Түбәндә нотаның тексы баҫыла.

«СССР Хөкүмәте ошо йылдың 19 майында АҠШ Хөкүмәтенән «Япония менән ярашыу договорының АҠШ проекты айҡанлы СССР Хөкүмәтенең ошо йылдың 7 майзағы иҫкәрмәләренә» яуап Меморандумы алды.

Ҡушма Штаттар Хөкүмәтенең, АҠШ Хөкүмәтенең 1951 йылдың 29 мартындағы Меморандумына Советтар Союзы Хөкүмәтенең иҫкәрмәләрен ҡарап, СССР Хөкүмәтенең ҡарашы менән Американың март проектында ҡуйылған ярашыу шарттары араһында булған ҡаршылыҡтар һәр ике яҡтың килешелгән ярашыу договоры төҙөүгә өлгәшеүгә ҡамасаулыҡ итерлек ҙур түгелдәр, тип иҫәпләй, тигән белдереүен Совет Хөкүмәте иғтибарға ала.

Ләкин, юғарыла күрһәтелгән белдереү менән бер рәттән, Американың 19 майзағы Меморандумында «Япония менән ярашыу договорының АҠШ проекты айҡанлы СССР Хөкүмәтенең 7 майзағы иҫкәрмәләренә» ҡарата әйтелгән дөрөҫ булмаған һәм күп кенә ваҡиғаларға был иҫкәрмәләрҙең мәғәнәһен боҙоусы фекерҙәр булыуы айҡанлы, Совет Хөкүмәте тулы асыҡлыҡ индереү маҡсаттарында түбәндәгеләрҙе белдереүҙе кәрәкле тип иҫәпләй.

I. Япония менән ярашыу договорының Америка проектының төп положениеләре тураһында

а) Советтар Союзы өсөн булһын, шулай уҡ Алыҫ Көнсығышта ныҡлы тыныслыҡты тәьмин итеү менән ҡыҙыҡһыныусы башҡа илдәр өсөн дә Японияның яңынан агрессив государствоға әйләнмәүе, япон милитаризмын ҡайтанан тергеҙелеүен булдырмау тураһындағы мәсьәлә мөһим әһәмиәткә эйә булып тора.

Билдәле булыуынса, бынан 10 йылдан аҙ ғына элек милитаристик Япония Владивосток районында Советтар Союзына һөжүм итте. Ҡытайға баҫып ингән япон империализмы 15 йыл буйына Ҡытай халҡын таланы, уға ғәйәт ҙур бәлә-ҡазалар килтерҙе. Япония империалистары Ҡушма Штаттарға, ә һуңынан Азиялағы күп кенә государстволарына, шул иҫәптән, Индияға һөжүм итеүҙән дә туҡтап ҡалманылар. Был бөтә Алыҫ Көнсығышта һуғышты сисеп ебәрҙе.

Япония менән ярашыу договорының Америка проектында Японияның агрессив государство булып ҡайтанан тергеҙелеүенә ҡаршы гарантия бармы һуң? Был проект менән танышыу был турала унда бер ниндәй гарантия булмауын күрһәтә.

Быныһы менән бәйләнештә «Япония менән ярашыу договорының Америка проекты айҡанлы Совет Хөкүмәтенең иҫкәрмәләренә», «Америка проектында япон милитаризмын тергеҙеүгә ҡаршы гарантия булмау ғына түгел, ә ғөмүмән ул Япония ҡоралы көстәренең күләмдәренә ҡарата бер ниндәй ҙә сикләүҙәр ҡуймай», тип әйтелгәйне. Мәҫәлән, Италия менән ярашыу договорында бындай сикләүҙәр бар ине һәм Японияның, Италия менән сағыштырғанда, бындай өҫтөн хәлдә булыуы өсөн бер ниндәй ҙә нигеҙләмәләр юҡ.

Совет Хөкүмәтенең был раҫлауын кире ҡаға алмағас, АҠШ Хөкүмәте 19 майзағы Меморандумда был мәсьәлә буйынса үҙ белдереүҙәрендә асыҡтан-асыҡ ҡапма-ҡаршылыҡ күрһәтә. Бер яҡтан, был Меморандумда үҙ, Японияның демилитаризациялау тураһындағы мәсьәлә буйынса йәнәһе державалар араһында «оккупация осоронда ҡағылған ҡарарҙарҙан башҡа фактик алғанда» бер ниндәй ҙә килешеүҙәр юҡ, тип белдерә. Ләкин, икенсе яҡтан, АҠШ Хөкүмәте шунда уҡ Японияның капитуляция яһауы тураһында дүрт державаның Потсдам декларацияһына һылтана. Ул декларацияла Японияны оккупациялауҙың төп маҡсаты сифатында «Японияның һуғыш алып барыу һәләтлегенең бөтөрөлөүенә ышанырлыҡ иҫбатлар» алыу бурысы ҡуйылған, был, күренеүенсә, оккупация осороно ғына түгел, бәлки артабанғы ваҡытҡа ла ҡағылып ҡала.

Бынан тыш, Алыҫ Көнсығыш Комиссияһының ҡарарҙары ла бар. Был Комиссия 1947 йылдың 19 июнендә уҡ «Капитуляция яһағандан һуң Японияға ҡарата төп политика» тигән документында булған мөһим ҡарарҙы ҡабул иткәйне. Алыҫ Көнсығыш Комиссияһының Австралия, Канада, Ҡытай, Франция, Индия, Голландия, Яңы Зеландия, Филиппины, СССР, Англия һәм АҠШ вәкилдәре ҡатнашлығында ҡабул ителгән был төп документында түбәндәге бурыс береһе итеп ҡуйылғайны: «Тулы ҡоралһыҙландырылыуы, Японияның һуғыш алып барыу мөмкинлегенән мәхрүм итеү маҡсатын тотҡан иҡтисади реформа үткәреүҙе, милитаристик йоғонтоларҙы бөтөрөүҙе һәм хәрби сәйәсәттәрҙе ҡарата ҡаты хөкөмдә тормошҡа ашырыуҙы ла индереп, ҡаты контроль осорон урынлаштырыуҙы талап итеүсе күп кенә саралар үткәреү юлы менән Японияның физик һәм рухани демилитаризацияһы эшен тамамларға».

Был ҡарар ҙа, әлбиттә оккупация осороно ғына ҡағылмай.

Килтерелгән фактарҙан һуң АҠШ Хөкүмәтенең, йәнәһе Японияның демилитаризациялауға ҡарата державалар араһында «оккупация осоронда ҡағылған ҡарарҙарҙан башҡа фактик алғанда» бер ниндәй ҙә килешеүҙәр юҡ, тигән раҫлауының ниндәй нигеҙһеҙлеге ни тиклем асыҡ торғанлығы асыҡ.

Килтерелгән фактарҙан һуң Америка проектында Японияның ҡоралы көстәрен бер ниндәй сикләүҙәр булмағас унда япон милитаризмын аяҡҡа баҫтырыуға һәм япон агрессиянының ҡабатланыу мөмкинлегенә ҡаршы һис бер гарантия юҡлығын кире ҡағырға мөмкин түгел. Японияның агрессия һөжүмен кисергән һәм Алыҫ Көнсығыштағы ныҡлы тыныслыҡты тәьмин итеү менән ҡыҙыҡһынған бер генә государствоның да бындай хәл менән ризалаша алмауы аңлашыла.

Шул уҡ ваҡытта, АҠШ Хөкүмәте үҙенең оккупацион властары аша Японияла япон милитаризмын ҡайтанан тергеҙеү политикаһын фактик алғанда тормошҡа ашыра ла инде. Был Америка оккупацион властарының Японияла хәрби базаларҙы бөтөрөү буйынса саралар үткәрмәү генә түгел, ә, киреһенсә, уларҙы байтаҡ киңәйтергә, яңыртырға һәм агрессив маҡсаттар өсөн файҙаланырға ынтылыуҙарынан күренә. Японияла ҡоро ер армияһын, хәрби-диңгеҙ һәм хәрби-һауа флоттарын яңынан төҙөй башлағандар ҙа инде; элекке япон хәрби арсеналдарының һәм хәрби әһәмиәттәге предприятиеларҙың эшен аяҡҡа баҫтыралар һәм киңәйтәләр; япон хәрби енәйәтселәрен азат итәләр; милитаристик ойошмаларҙы аяҡҡа баҫтыралар һәм һуғыш пропагандаһын әленән-әле күберәк яҡлайҙар; хөкүмәт аппаратында милитаризмды ҡайтанан тергеҙеүҙе яҡлаусыларҙың ролен һәм йоғонтоһон көсәйтәләр. Бынан тыш, Ҡушма Штаттар, 19 майзағы үҙ Меморандумында АҠШ Хөкүмәте нигеҙҙә үҙе үк танығанса, Японияның промышленносте һәм кеше ресурстарын Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының флагы аҫтында Кореяла законһыҙ рәүештә үткәрелгән хәрби интервенцияла файҙалана башлағандар.

Ярашыу договорының АҠШ проекты ла, шулай уҡ Японияла Американың оккупацион властары тарафынан үткәрелгән политика ла АҠШ Хөкүмәтенең япон милитаризмының ҡайтанан тергеҙелеүенә юл ҡуймасҡа Халыҡ-ара килешеүҙәр буйынса үҙ өҫтөнә алған йөкләмәләр менән иҫәпләшмәүен күрһәтә. Асылда, Япония менән ярашыу договорының Америка проекты АҠШ-тың 19 майзағы Меморандумы кеүек үк, япон агрессияһының ҡабатланыуын иҫкәртеүҙең тыныс маҡсаттарын түгел, ә япон милитаризмын ҡайтанан тергеҙеүҙең агрессив маҡсаттарын күҙҙә тота.

Япония менән ярашыу договорының Америка проектында милитаристик Япония агрессияһынан зарар күргән илдәрҙең киләсәктә именлеген тәьмин итеү, был, ярашыу договорының төп бурыстарының береһе булып торорға тейеш булыуы һәр бер кешегә аңлайышлы булһа ла, бер нисек тә гарантияланмай. Быныц урынына проектта Японияла «үҙ именлеген тәьмин итеүгә өлөш» индереү мөмкинлеген биреү айырыуса әйтеп үтелә, йәнәһе, был, БМО-ла член булған илдәр өсөн Берләшкән Милләттәр Уставында күҙҙә тотолған «үҙ-үҙеңде индивидуаль йәки коллектив оборона-лау хоҡуҡына» ярашлы булып тора.

АҠШ-тың 19 майзағы Меморандумында был мәсьәлә буйынса тағы ла асығыраҡ әйтелә. Был Меморандумда, АҠШ Хөкүмәте «договорҙы төҙөгәндән һуңғы осорға Япония менән икенселек тураһында килешеү төҙөргә» уйлай, тип әйтелгән, йәғни АҠШ менән Япония араһында хәрби килешеү төҙөү күҙҙә тотола.

Бынан шул килеп сыға, япония милитаризмының ҡайтанан тергеҙелеүенә юл ҡуймау һәм япон агрессияһынан зарар күргән илдәрҙең киләсәктә именлеген тәьмин итеү бурысын АҠШ Хөкүмәте Япония менән хәрби килешеү төҙөү менән алмаштыра» был, милитаризмды аяҡҡа баҫтырыуға Японияны тағы ла күберәк этәрәсәк. АҠШ-тың Япония менән был хәрби килешеүендә Ҡытай Халыҡ Республикаһы һәм Советтар Союзы кеүек илдәрҙең ҡатнашмауы бөтөнләйгә асыҡ булғанлыҡтан АҠШ-тың Япония менән был хәрби килешеүенең, бөтәһенән элек, тап ошо государстволарға ҡаршы йүнәлтелгәнлегенә һәм асыҡтан-асыҡ агрессив характерҙа икәнлегенә шик юҡ.

Унан һуң БМО Уставындағы «үҙ-үҙеңде индивидуаль һәм коллектив обороналау хоҡуҡына» һәр төрлө һылтаныуҙарҙың был ваҡиғала асыҡтан-асыҡ нигеҙһеҙ һәм үтә күренеп торған ялғанлыҡ булыуы асыҡ.

Шулай уҡ агрессияға ҡаршы көрәш һәм тыныслыҡ һаҡлаусы илдәрҙең коллектив именлеге тураһындағы мәсьәлә буйынса И. В. Сталиндың 1939 йылдың 10 мартында яһаған белдереүенә Америка Меморандумындағы һылтаныуҙарҙың был юлы бөтөнләй урынһыҙ булыу ғына түгел, бәлки икейөҙлө булып тороуын да иҫбатларға тура килмәй.

Шулай итеп, АҠШ-тың 19 майзағы Меморандумы Япония менән ярашыу договорының Америка проектының тыныслыҡ һөйөүсе халыҡтарға бик күп бәләләр килтергән япон милитаризмын ҡайтанан тергеҙеүгә ҡаршы гарантиялар бирмәү генә түгел, бәлки, киреһенсә, Япония государствоһының үткән сиктән сыҡҡан агрессия юлына Японияны әҙерләүен күрһәтә һәм, тимәк, Алыҫ Көнсығышта ныҡлы тыныслыҡты тәьмин итеү интерестарына булһын, шулай уҡ Японияның үҙенең милли интерестарына ла тамырынан ҡапма-ҡаршы килә.

б) ЯПОНИЯНЫ ОККУПАЦИЯЛАУҘЫ БӨТӨРӨҮ ҺӘМ ЯПОНИЯ ТЕРРИТОРИЯҺЫНАН СИТ ИЛ ҒӘСКӘРҘӘРЕН СЫҒАРЫУ ТУРАҺЫНДА

7 майзағы үҙенең иҫкәрмәләрендә Совет Хөкүмәте, «Япония менән Ярашыу договорын төҙөгәндән һуң бер йылдан да һуңламайынса бөтә оккупацион ғәскәрҙәр Япония территорияһынан сығарылалар һәм бер генә сит ил государствоһының да Японияла ғәскәрҙәре йәки хәрби базалары булмаясаҡ», тип договорҙа аныҡ итеп күрһәтергә тәҡдим иткәйне.

Билдәле булыуынса, Италия менән Ярашыу договорында шулай уҡ Европа илдәре менән башҡа ярашыу договорҙарында, оккупация мөмкин тиклем ҡыҫҡа ваҡыт эсендә һәм, һуңғы сиктә, Ярашыу договоры үҙ көсөнә ингәндән һуң 90 көндән дә һуңламайынса тамамланырға тейеш, тип аныҡ итеп күрһәтелгән. Ләкин Япония менән Ярашыу договорының Америка проектында Япониянан оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыу өсөн бер ниндәй срок күрһәтелмәй. АҠШ-тың 19 майзағы Меморандумында булған оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыуҙың ниндәй ҙә булһа срогын күрһәтмәйенсә, «оккупация договор үҙ көсөнә ингәс тә туҡталасаҡ» тигән билдәһеҙ белдереү тик хаталандырыуы ғына мөмкин; шул уҡ ваҡытта ошо уҡ Меморандумдан АҠШ-тың фактик алғанда Ярашыу договорын төҙөгәндән һуң да үҙ ғәскәрҙәрен сығарырға йыйынмауы, ә Японияла йәнәһе «оккупацион ғәскәрҙәр сифатында түгел», ә былай ғына үҙ ҡоралы көстәрен ҡалдырырға уйлауы күренә.

Япония территорияһынан оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыу срогын билдәләүҙән баш тартып, АҠШ Хөкүмәте халыҡ-ара килешеүҙәр буйынса үҙенең мөһим йөкләмәләренең береһен боҙа. Ярашыу договорын төҙөгәндән һуң ниндәй генә һылтау аҫтында булһа ла Японияла сит ил ғәскәрҙәрен ҡалдырыу Япониянан сит ил ғәскәрҙәрен сығарыуҙы күҙҙә тотоусы 1945 йылдың 26 июлендәге Потсдам Декларацияһына ҡапма-ҡаршы килә һәм Японияны оккупациялауҙы билдәһеҙ булмаған оҙаҡ ваҡытҡа йәшерен оҙайтыуҙы аңлата.

Ярашыу договорын төҙөгәндән һуң да оккупацияны оҙайтырға уйлап, АҠШ Хөкүмәте шулай итеп Японияла оҙаҡ ваҡытҡа фактик хужа булып ҡалырға ынтыла. Бындай хәлдә АҠШ Хөкүмәтенең оккупация йылдарында үҙе өсөн тәьмин ителгән өҫтөнлөктәрҙе һаҡлап алып ҡалырға ла иҫәп тотоуы мөмкин, Японияның АҠШ-тан политик һәм экономик бойондороҡлолоғон оҙайтырға иҫәп тотоуы мөмкин, Японияла үҙенең хәрби базаларын һаҡлап алып ҡалыуға ғына түгел, бәлки артабан арттырыуға ла иҫәп тотоуы мөмкин. Быларҙың бөтәһе лә тик Япония менән тыныслыҡты айға һалыу һәм Алыҫ Көнсығышта тыныслыҡты ныҡытыу эшен ҡаҡшатыуы ғына мөмкин булыуы аңлайышлы.

Шуға күрә Япония менән Ярашыу договорында Япония территорияһынан оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыу срогының аныҡ билдәләнелеүе һәм был договорҙа, бер генә сит ил государствоһының да Японияла ғәскәрҙәре йәки хәрби базалары булмаясаҡ, тип әйтелеүе кәрәк.

в) ЯПОНИЯ МЕНӘН ЯРАШЫУ ДОГОВОРЫНА ҠУЛ ҠУЙЫУҘА ҠЫҘЫҠҺЫНҒАН ГОСУДАРСТВОЛАРҒА ҠАРШЫ КОАЛИЦИЯЛА ЯПОНИЯНЫҢ ҠАТНАШЫУЫНА ЮЛ ҠУЙМАУ ТУРАҺЫНДА

Япония менән Ярашыу договорына ҡул ҡуйыуҙа ҡыҙыҡһынған ниндәй ҙә булһа государствоға ҡаршы йүнәлтелгән коалицияға инмәҫкә Японияны мәжбүр итергә тигән Советтар Союзының тәҡдиме менән АҠШ Хөкүмәтенең үҙ Меморандумында ни өсөн ризалашмауы юғарыла әйтелгәндәрҙән тулыһынса аңлашыла. Япония БМО Уставының 2-се статьяһына ярашлы рәүештә ниндәй ҙә булһа государствоның территориаль бөтөнлөгөнә һәм политик бойондороҡһоҙлоғона ҡаршы агрессия яһауҙан йәки көс ҡулланыуҙан тыйылырға тейеш, тип АҠШ Хөкүмәтенең һылтаныуы бөтөнләйгә нигеҙһеҙ булып тора. Тәжрибә Ҡушма Штаттар Хөкүмәтенең үҙенең политик һәм экономик бойондороҡло булған күп кенә илдәрҙе — БМО члендарын (бөтәһенән элек — Төньяҡ атлантик союзда ҡатнашыусыларҙы һәм Латин Америкаһы Республикаларын) БМО-ны Алыҫ Көнсығышта агрессив һуғышты сисеп ебәреү ҡоралына әйләндереү өсөн файҙаланыуын күрһәтте. АҠШ Хөкүмәтенең Меморандумында, шулай уҡ Ярашыу договорының Америка проектының 6-сы статьяһында БМО Уставының 2-се статьяһына һылтаныу Японияны ла шул уҡ маҡсаттарҙа файҙаланыуға иҫәпләнгән.

Бынан тыш, Японияны коалицияла ҡатнаштырмау тураһында Совет Хөкүмәте тәҡдименең АҠШ менән Япония араһында төҙөлөүе мөмкин булған хәрби килешеү айҡанлы мөһим актуаль әһәмиәткә эйә булыуын аңлау ҡыйын түгел.

г) ЯПОНИЯНЫҢ ТЫНЫС ЭКОНОМИКАҺЫНАН ҺӘМ БАШҠА ИЛДӘР МЕНӘН ЯПОНИЯНЫҢ САУҘАҺЫНАН СИКЛӘҮҘӘРҘЕ АЛЫУ ТУРАҺЫНДА

Японияның тыныс экономикаһына ҡарата бөтә төр сикләүҙәр һәм Америка оккупацион властарының Америка фирмалары өсөн өҫтөнлөктәр урынлаштырыуҙары арҡаһында Японияның тыныс экономикаһының АҠШ-тан ҡабалалы бойондороҡлоҡҡа ҡуйылыуы тураһындағы мәсьәләне АҠШ-тың 19 майзағы Меморандумы ситләтеп үтә. Япония күршеләге государстволар менән нормаль сауҙа алып барыу мөмкинлегенән мәхрүм ителгән, был, Японияның халыҡ хужалығын күтәреү перспективаларын тағы ла күберәк ҡаҡшата.

Совет Хөкүмәте, ситтән көсләп тағылған сикләүҙәрҙе мыҫыҡлап та бөтөрмәйенсә тыныс экономиканы күтәреү өсөн, япон халҡының тормошон яҡшыртыу өсөн шарттар тыуҙырып булмай, тип иҫәпләй.

д) ЯПОН ХАЛҠЫНА ДЕМОКРАТИК ХОҠУҠТАР ТӘЬМИН ИТЕҮ ТУРАҺЫНДА

АҠШ-тың 19 майзағы Меморандумына ҡарап фекер йөрөткәндә Японияны демократизациялауға ҡарата бөтә кәрәкле нәмәгә өлгәшелгән булып күренә. Ләкин был бөтөнләй дөрөҫ түгел. Ысынбарлыҡта Японияла оккупацион властар булышлығында, полицейскийҙарҙың демократик матбуғат органдарын эҙәрләүҙәре, профсоюздарға һәм башҡа демократик ойошмаларға ҡаршы репрессиялар үткәреүҙәре, политик ҡараштар өсөн эҙәрләүҙәре тулыһынса ҡайтанан тергеҙелә һәм Япониялағы һуғышҡа тиклемге фашистик тәртиптәргә — «ҡурҡыныслы уйҙарға» ҡаршы көрәш тураһындағы хурлыҡлы закон йөшәгән тәртиптәргә кире ҡайтыу урындары ла бар.

Быларҙың бөтәһе лә Японияны демократизациялау тураһында Совет Хөкүмәтенең иҫкәрмәләрендә килтерелгән тәҡдимдәрҙе ҡабул итеү кәрәклеген раҫлайҙар.

е) ТЕРРИТОРИЯ МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ БУЙЫНСА КАИР ДЕКЛАРАЦИЯҺЫН, ПОТСДАМ ДЕКЛАРАЦИЯҺЫН ҺӘМ ЯЛТА КИЛЕШЕҮЕН ҮТӘҮ ТУРАҺЫНДА

Территория мәсьәләһенә килгәндә, Совет Хөкүмәте тик бер генә нәмәне — юғарыла күрһәтелгән һәм Америка Ҡушма Штаттарының унда ҡултамғаһы булған халыҡ-ара килешеүҙәрҙе намыҫлы үтәүҙе тәьмин итеүҙе генә тәҡдим итә.

Билдәле булыуынса, Каир декларацияһында, Тайвань утрауы һәм Пескадор утрауҙары Ҡытай Республикаһына ҡайтарып бирелергә тейештәр, тип әйтелә. Ҡытай Республикаһы Ҡытай Халыҡ Республикаһына әүерелгәс һәм тик Ҡытай Халыҡ Республикаһы ғына Ҡытай халҡының ихтыярын ҡаҙаландырғас, Тайвань һәм Пескадор утрауҙарының Ҡытай Халыҡ Республикаһына бирелергә тейеш булыуы тулыһынса асыҡ. Әгәр ҙә улай булмаһа Каир килешеүе үтәлмәйәсәк һәм бының өсөн бөтә яуаплылыҡ АҠШ Хөкүмәтенә төшәсәк.

Рюкю, Бонин, Розарио, Волкано, Парес Вела һәм Маркус утрауҙарына килгәндә, АҠШ-тың 19 майзағы Меморандумында Совет Хөкүмәтенең 7 майзағы иҫкәрмәләрендә килтерелгәндәрҙе Совет Хөкүмәтенең яңынан раҫлауын талап итеүгә бер нәмә лә юҡ.

ж) СССР-ҒА ҠАРШЫ ЯЛА ЯҒЫУ ТУРАҺЫНДА

АҠШ Хөкүмәтенең 19 майзағы Меморандумында былай тиелгән: «ССР Союзының Маньчжурияла интерестар зоналары алыуының билдәле факты айҡанлы АҠШ Хөкүмәте Совет Хөкүмәтенең Маньчжурияға ҡайтарып биреүгә һылтаныуҙарҙы булдырмаҫҡа ынтылыуының мәғәнәһе тураһында һорарға ашыға». Совет Хөкүмәте был айҡанлы, СССР-ҙың Маньчжурияла бер ниндәй ҙә интерестар зоналары юҡ, һәм, бөтәһенә лә билдәле булғанынса, ул Маньчжурияны Ҡытай Халыҡ Республикаһының айырылғыһыҙ өлөшө итеп ҡарай, тип белдереүҙе кәрәкле тип иҫәпләй. Был айҡанлы Америка Меморандумының юғарыла күрһәтелгән белдереүен бер нәмә аңламайынса тик торған кешеләрҙең уйлап табыуҙары һәм СССР-ға мөкерлә яла яғыу итеп баһаларға кәрәк.

Совет Армияһының Японияның Квантун армияһын тар-мар итеп Маньчжурияны азат иткәнлеге һәм уны Ҡытай халҡының законлы властына ҡайтарып биргәнлеге АҠШ Хөкүмәтенә билдәле булмауы мөмкин түгел. Ялта килешеүенә һәм 1945 йылдың 14 августындағы Совет-Ҡытай килешеүенә ярашлы рәүештә Советтар Союзына тапшырылған Порт-Артур хәрби-диңгеҙ базаһына һәм Ҡытай-Чанчун тимер юлына хоҡуҡҡа килгәндә Совет Хөкүмәте был хоҡуҡтарҙан Ҡытай Халыҡ Республикаһы файҙаһына үҙе талап баш тартты һәм түләүһеҙ бирҙе, 1950 йылдың 14 февралендә Мәскәүҙә төҙөлгән тейешле килешеүҙәр үҙ ваҡытында иғлан ителделәр һәм, әлбиттә, АҠШ Хөкүмәтенә билдәлеләр.

Был договорға ярашлы рәүештә Советтар Союзы, билдәле булыуынса, Порт-Артурҙағы үҙенең хәрби-диңгеҙ базаһын 1952 йылдан да һуңламайынса бөтөрә һәм унан үҙ ғәскәрҙәрен сығара.

Совет Хөкүмәтенең фекере буйынса Маньчжурия айҡанлы СССР-ға яла яғыуҙан АҠШ Хөкүмәте баш тартһа һәм Тайвандан һәм Пескадор утрауҙарынан үҙенең ҡоралы көстәрен сығарыу һәм законһыҙ баҫып алынған был территорияларҙы уларҙың законлы эйәһе — Ҡытай Халыҡ Республикаһына ҡайтарып биреү тураһында хәстәрлек күрһә, яҡшыраҡ булыр ине.

АҠШ Хөкүмәтенең 19 майзағы Меморандумында шулай уҡ, йәнәһе Совет Хөкүмәте «капитуляция шарттарын боҙоп, самаһы менән алғанда 200 мең япон һалдатын үҙ илдәренә һәм тыныс тормошҡа ҡайтарыуға юлһыҙлыҡ яһай», тип әйтелә.

АҠШ Хөкүмәтенең үҙенең дә был белдереүгә һис тә ышанмауына шик булыу мөмкин түгел, Совет Хөкүмәте, 1950 йылдың 22 апрелендә үк Советтар Союзынан япон хәрби пленныйҙарын репатриациялауҙы тамамлау тураһында официаль белдереү иғлан иткәйне, ул, ошо мәсьәлә буйынса башҡа белдереүҙәр кеүек үк, державалар иғтибарына еткерелгәйне, тип хәтергә төшөрөүҙе кәрәкле, тип иҫәпләй. Юғарыла әйтелгән белдереүҙә, үҙҙәре тарафынан яһалған хәрби енәйәттәре өсөн хөкөм ителгән тикшереү эштәре алып барылған 1.487 япон хәрби-пленныйы, эҙәрләү тамамланғандан һуң репатриацияланырға тейеш булған 9 япон хәрби-пленныйы һәм Ҡытай халҡына ҡаршы ауыр енәйәттәр яһаған һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһы ҡарамағына тапшырыласаҡ 971 япон хәрби-пленныйы ғына репатриацияланмай ҡалды, тип күрһәтелгәйне.

Тимәк, АҠШ Меморандумында, Совет Хөкүмәте сама менән алғанда 200 мең япон һалдатын тыуған иленә ҡайтарыуға юлһыҙлыҡ яһай, тигән раҫлау ерәнес яла яғыу булып тора һәм тик яла яғыусыларҙың үҙҙәренә генә барып тейә.

Советтар Союзы Японияға ҡаршы һуғышта тик 6 ғына көн ҡатнашты һәм был һуғышта Советтар Союзының хәрби тырышлыҡтарының роле йәнәһе ҙур түгел, тип АҠШ Меморандумында әйтелгән иҫкәрмәгә килгәндә, Совет Хөкүмәте түбәндәгеләрҙе белдереүҙе кәрәкле, тип иҫәпләй. Беренсенән, Советтар Союзы Японияға ҡаршы һуғышты Ялта конференцияһында килешелгән срокта, унан аҙ ғына ла һуңламайынса башланы. Икенсенән, Совет Армияһы япон ғәскәрҙәренә ҡаршы 6 көн түгел, ә бер ай буйына ҡан ҡойошло һуғыш алып барҙы, сөнки Квантун армияһы капитуляция тураһында император декларацияһына ҡарамаҫтан, ҡаршылыҡ күрһәтеүҙе бик оҙаҡ дауам иттерҙе. Өсөнсөнән, Совет Армияһы Маньчжурияла 22 япон дивизияһын — япон Квантун армияһының төп көстәрен тар-мар итте һәм 600 мең самаһы япон һалдатын һәм офицерын пленға алды. Дүртенсенән, Квантун армияһына Совет ғәскәрҙәре биргән хәл иткес удары яһалғандан һуң ғына Япония капитуляция яһаны. Бишенсенән, Японияға ҡаршы һуғыш башланғанға тиклем СССР, 1941—1945 йылдарҙа, Маньчжурия сигендә 40-ҡа яҡын дивизия тотто һәм бөтә Квантун армияһын үҙ сигендә торорға мәжбүр итте, бының менән ул япон милитаристарына ҡаршы һуғышта Ҡытайға һәм АҠШ-ҡа операцияларҙы еңеләйтте.

Бөтә был фактар, әлбиттә, АҠШ Хөкүмәтенә билдәле һәм, был фактарға ҡарамаҫтан, АҠШ Хөкүмәте япон милитаризмын тар-мар итеү эшендә Советтар Союзының күренекле ролен кәмерәйтергә үҙенә рөхсәт итә икән инде, быны тик АҠШ Хөкүмәтенең бер ниндәй ҙә ышандырырлыҡ дәлилдәре булмауы һәм был айҡанлы ошо ваҡиғала СССР-ға ҡаршы яла яғырға мәжбүр булыуы менән генә аңлатырға мөмкин.

2. Сепаратив договор урынына Япония менән бөтә яҡлы ярашыу договорын әҙерләү тураһында

Договор проекты айҡанлы юғарыла яһалған иҫкәрмәләрҙән тыш, Совет Хөкүмәте ҡыҙыҡһыныусы илдәрҙең кәңәшмәһе булғанда, был проекттың асылы буйынса башҡа иҫкәрмәләрҙе лә әйтергә уйлай.

Договорҙы әҙерләү тәртибенә килгәндә инде Совет Хөкүмәте был мәсьәлә буйынса Потсдам килешеүен һаҡлауҙы талап итә.

а) 19 майзағы үҙенең Меморандумында АҠШ Хөкүмәте Совет Хөкүмәтенең Потсдам килешеүенең текеы килтерелгән иҫкәрмәһенә яуап биреүҙән тайшанды. Был тексҡан шул күренә: биш держава—АҠШ, СССР, Ҡытай, Великобритания һәм Франция составында бөтәһенән элек, «тыныс айға һалыу буйынса әҙерлек эше» өсөн Сит Ил Эштәре Министрҙары Советы төҙөлә һәм тейешле ярашыу договорҙарын төҙөгән ваҡытта, «советтен ошо бурыс ҡағылған дошман государствоға ҡуйылған капитуляция шарттарына ҡул ҡуйған государстволарҙың вәкиле булған члендарҙан торасағы» күренә.

Шул уҡ ваҡытта Потсдам килешеүендә юғарыла килтерелгән һылтаныуҙар түбәндәге бәхәсһеҙ һығымталарҙы яһарға нигеҙлек бирәләр:

беренсенән, биш держава составында Сит Ил Эштәре Министрҙары Советын төҙөгән ваҡытта, уның төп бурысы сифатында «тыныс айға һалыу буйынса әҙерлек эше» турапан-тура күрһәтелгәйне, шул уҡ ваҡытта тыныс айға һалыу Европа менән генә сикләнмәгәйне;

икенсенән, тыныс айға һалыу буйынса үҙенең әҙерлек эшен Сит Ил Эштәре Министрҙары Советы «капитуляция шарттарына ҡул ҡуйған государстволарҙан вәкил булған» члендар составында алып барырға тейеш, бынан, Япония менән Ярашыу договорын әҙерләүҙе дүрт илгә — Японияның капитуляция яһауы тураһындағы актҡа ҡул ҡуйған АҠШ, СССР, Великобритания һәм Ҡытайға йөкмәтелгәнлеге күренә.

Тимәк, Япония менән Ярашыу договорын әҙерләүгә ҡарата Потсдам килешеүен үтәү АҠШ, СССР, Великобритания һәм Ҡытай вәкилдәре составында Сит Ил Эштәре Министрҙары Советын саҡырыуҙы талап итә, һәм АҠШ Хөкүмәтенең быға ҡаршы килеүе өсөн бер ниндәй нигеҙҙәре юҡ.

Сит Ил Эштәре Министрҙары Советын саҡырыу Япония менән Ярашыу договорын әҙерләүгә йәнәһе тотҡарлыҡ яһауы мөмкин, тигән дәлилдәр буйынса уны саҡырыуға ҡаршы килеүҙең нигеҙһеҙлеге шулай уҡ тулыһынса күренеп тора. Был ҡаршы төшөүҙәр һуңғы бер нисә йылдар буйына йәшәп килделәр инде, һәм улар тик эште һуҙыуға ғына килтерҙеләр. Шуны әйтергә кәрәк, был ваҡыт эсендә договорҙы әҙерләү тамамланыр ине инде һәм Сит Ил Эштәре Министрҙары Советы тарафынан башҡа биш государство — Италия, Болгария, Румыния, Венгрия, Финляндия менән Ярашыу договорҙарын әҙерләгән кеүек әҙерләнер һәм ҡул ҡуйылыр ине.

Совет процедураһы ҡайһы бер союзный государстволарға «икенсе дәрәжәләге роль» бирер ине, тигән белдереү ҙә шулай уҡ нигеҙһеҙ. Шуны күрһәтеү ҙә етә, АҠШ Хөкүмәте тарафынан көсләп тағылған тәртиптә фактик алғанда бөтә союзный государстволар договорҙы әҙерләүҙән ситләтелгәндәр, сөнки АҠШ Хөкүмәте был эште тик үҙ ҡулына алыу юлы менән китте.

б) 7 майзағы үҙенең иҫкәрмәләрендә Совет Хөкүмәте Япония менән Ярашыу договорын әҙерләүҙә Ҡытайҙы ситләтеүҙән юл ҡуймаҫлыҡ булыуын билдәләгәйне. Ҡытай халҡы үҙ территорияһына баҫып ингән милитаристик Японияға ҡаршы оҙаҡ йылдар буйынса ауыр һуғыш алып барырға мәжбүр булды, ул был һуғышта сиктән тыш ҙур ҡорбан бирҙе, һәм шуға күрә Ҡытай халҡының ихтыярын берҙән-бер законлы ҡаҙаландыраусы булараҡ, Ҡытай Халыҡ Республикаһының Хөкүмәте Алыҫ Көнсығышта ныҡлы тыныслыҡты урынлаштырыуға хеҙмәт итергә тейеш булған договорҙы әҙерләүҙән ситләтелә алмай. Ҡытай Халыҡ Республикаһы Хөкүмәтенең ошо йылдың 22 майзағы белдереүе договорҙы әҙерләүҙә уның законлы хоҡуҡтарын һәм ныҡ ҡыҙыҡһыныуын раҫлай, башҡа государстволар бының менән иҫәпләшмәйенсә ҡала алмайҙар.

Шул уҡ ваҡытта договорҙың Америка проекты һәм АҠШ-тың 19 майзағы Меморандумы Тайвань утрауын һәм Пескадор утрауҙарын Ҡытайға ҡайтарып биреү тураһындағы Каир килешеүен үтәүҙән баш тартып, АҠШ Хөкүмәте Ҡытайҙың үҙ территорияһына ҡарата уның милли хоҡуҡтарын турапан-тура боҙоуға, шулай уҡ Япония менән Ярашыу договорын әҙерләүҙән дә Ҡытайҙы ситләтеүгә барғанлығы күренә.

Ярашыу договорҙарын әҙерләүҙең билдәләнгән тәртибенән баш тартып, АҠШ Хөкүмәте Ҡытай Халыҡ Республикаһын һәм Советтар Союзын, шулай уҡ башҡа ҡыҙыҡһынған илдәрҙе, был илдәрҙең законлы хоҡуҡтары һәм интерестары менән иҫәпләшмәйенсә, договорҙы төҙөүҙән ситләтергә ынтыла. Договорҙың үҙенә ярашлы шарттарын Японияға көсләп тағырға уйлай, сөнки Америка оккупацион властарынан бойондороҡло булараҡ Япония хөкүмәте АҠШ менән бындай килешеүҙе төҙөргә әҙер.

Быларҙың бөтәһе лә АҠШ Хөкүмәтенең Япония менән һуғыш хәлендә булған бөтә государстволар менән дә Японияның Ярашыу договоры булмауын теләүе тураһында һөйләйҙәр. Бөтә яҡлы Ярашыу договоры урынына Ҡушма Штаттар Японияға АҠШ Хөкүмәте һәм уның сателлиттары менән сепаратив договорҙы көсләп тағырға теләйҙәр.

АҠШ Хөкүмәтенең Япония менән бөтә яҡлы Ярашыу договорын теләмәйенсә сепаратив договорға ынтылыуын осраҡлы тип иҫәпләп булмай. Ҡушма Штаттар тағы ла күп кенә йылдарға Японияның бойондороҡлолоғон тик сепаратив договор төҙөү менән генә нығыта алалар. Договор проектында шулай уҡ АҠШ менән Япония араһында хәрби килешеү төҙөү ҙә күҙҙә тотолғас, сепаратив договорҙың маҡсаты Японияны АҠШ-тың Алыҫ Көнсығышта агрессив пландарын тормошҡа ашырыу буйынса тынлаусан ҡоралға әйләндереүҙән тороуы асыҡ.

Әгәр АҠШ Хөкүмәте Япония менән Ярашыу договорын әҙерләүҙән Советтар Союзын һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһын ситләтергә уйлауҙан баш тартмаһа һәм Японияға сепаратив Ярашыу договорын көсләп тағһа, был, беренсенән, Ҡушма-

(Аҙағы 4-се биттә).

Япония менән Ярашыу договоры тураһында АҠШ Хөкүмәтенә СССР Хөкүмәтенең нотаһы

(Аҙағы. Башы 3-сө биттә).

Штаттарҙың үҙҙәренең халыҡ-ара йөкләмәләрен, шул иҫәптән Берләшкән Милләттәрҙең сепаратив Ярашыуҙы төҙөмәҫкә мәжбүр итеүсе 1942 йылдың 1 ғинуарындағы декларацияһын тупаҫ боҙоу юлына баҫҡанлығын һәм, икенсенән, АҠШ-тың хәҙерге политикаһының Алыҫ Көнсығышта тыныслыҡты алҡҡа баҫтырыуға һәм ныҡлатыуға түгел, ә Тымыҡ океанда яңы агрессив группировка төҙөүгә алып барыуын аңлатасаҡ.

Бындай политиканың эҙемтәләре өсөн яуаплылыҡ тулыһынса АҠШ Хөкүмәтенә төшәсәк.

в) Япония менән Ярашыу договорының проекты тураһында СССР менән АҠШ вәкилдәре араһында һөйләшеүҙәр булды, тип АҠШ Хөкүмәтенең икенсе ҡапҡыр яһаған белдереүенә килгәндә инде, Совет Хөкүмәте, Ярашыу договорының проектын эшләү тураһында бер ниндәй һөйләшеүҙәр булманы, һәм була ла алманы, сөнки СССР Хөкүмәте был мәсьәлә буйынса сепаратив һөйләшеүҙәрҙең талаһә ниндәй формаһына ҡаршы килә, тип яңынан нығҡап әйтергә мәжбүр. Әлбиттә, Даллестең үҙенең һорауы буйынса Я. А. Малик менән Даллес араһында шәхси осрашыу, шулай уҡ Япония менән Ярашыу договоры тураһында Даллестең үҙ фекерҙәрен әйтеүе һәм Даллестең фекерен асыҡлау өсөн мәсьәләнең Малик тарафынан ҡуйылыуы булды. Ләкин, бындай шәхси осрашыуҙарҙы Япония менән Ярашыу договорын эшләү тураһында СССР менән АҠШ араһында һөйләшеүҙәр итеп ҡарау бөтөнләй дөрөҫ булмаҫ ине.

3. Совет Хөкүмәте үҙенең 7 майҙағы тәкдимдәрен тулыһынса раҫлап, Япония менән Ярашыу договорына ҡарата түбәндәге **төп принциптарҙы** талап итә.

Беренсе. Япония менән Ярашыу договоры сепаратив түгел, ә бөтә яҡлы булырға тейеш, бының өсөн Японияға ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан бер генә ил дә договорҙы әҙерләүҙән һәм уға ҡул ҡуйыуҙан ситләтелергә тейеш түгел.

Икенсе. Япония менән Ярашыу договоры Каир Декларацияһы Потсдам Декларацияһы, Ялта килешеүе нигеҙендә эшләнергә тейеш.

Өсөнсө. Япония менән Ярашыу договорҙарының булған проекттарын ҡарау өсөн Японияға ҡаршы һуғышта үҙенең ҡоралһы көстәре менән ҡатнашҡан бөтә государстволарҙың вәкилдәренән 1951 йылдың июлендә йәки августында Ярашыу Конференцияһы саҡырылырға тейеш.

Мәскәү, 10 июнь 1951 йыл».

Юғарыла килтерелгән нотаның күсермәләре Ҡытай Халыҡ Республикаһының, Великобритания, Франция, Индия, Пакистан, Бирма, Австралия, Канада, Яңы Зеландия, Голландия, Монголия Халыҡ Республикаһы һәм Корея Халыҡ Демократик Республикаһы Хөкүмәттәренә ебәрелде.

(ТАСС).

Башланғыс кластарҙа уҡыуҙар тамамланды. Балалар каникулдарын пионер лагерҙәрендә, санаторийҙарҙа, парктарҙа һәм баҡсаларҙа уҙғаралар.

Һүрәттә: 45-се номерлы ҡыҙҙар мәктәбенең уҡыусылары (һулдан уңға) Э. Сафина һәм П. Нестиренко паркта ял итәләр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

БЕҘҘЕҢ ПОЧТА

Киләһе редакцияға бөтәһе 42 хат алынды. Килгән хаттарҙың байтаҡ өлөшө республикабыҙҙың колхоздарында урожай йыйнауға әҙерлек мәсьәләһенә бағышланған. Күгәрсен районының Сталин, Димитров, Андреев, Куйбышев исемендәге, «Победа» һәм «Новый путь» колхоздары яҙғы сәсеү планын районда беренсе булып тамамлағайнылар. Хәҙер улар сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәрен киң йәйелдерҙеләр, тип яҙа хәбәрсебеҙ Х. Дәүләтшин.

Иптәш Ф. Богданов Ауырғазы районы Салауат исемендәге колхозда быйыл сәселгән 120 гектар шәкәр сөгөлдөрөнөң матур булып үҫеп сығыуы тураһында яҙа. Һуңғы көндә звено члендәре сөгөлдөр майҙанына беренсе ҡат утау һәм йомшартыу үткәргәндәр.

Бәләбәй районының колхоздары урожай йыйнау һәм государствоға иген тапшырыу кампанияһы башланғанға тиклем юлдарҙы һәм күперҙәрҙе төҙәкләндереү буйынса ныҡлы эш алып баралар. Маленков исемендәге колхоздың члендәре юлдарҙы төҙәкләндереүҙә ҙур инициатива күрһәтә, — тип яҙа хәбәрсебеҙ иптәш К. Абдуллин.

К. Вальшин һәм Н. Мостафин иптәштәр үҙҙәренең хаттарында Мәсетле районында Совет власы йылдарында 6 электр станцияһы, 2 теплоэлектростанция төҙәлеүе һәм бөгөнгө көн уларҙың 14 колхозды, 2 МТС-ты, 1 совхозды, урындағы промышленность предприятиеләрен хеҙмәтләндереүҙәре тураһында яҙалар. Районды тотош электрләштереү маҡсатында Мәсетле һәм Тайыш ауылдарында яңы электростанция төҙөү эштәре бара. Был хаттың авторҙары был эштәге ыңғай яҡтарҙы билдәләү менән бер рәттән, районды тотош электрләштереүҙә булған кәмселектәргә туҡталалар. Улар был эштә тейешле ярҙам күрһәтмәгәнлектәре өсөн «Башсельэлектро» һәм район ойошмалары етәкселәрен тәнҡитләйҙәр.

Иптәш К. Хәмитов үҙенең хатында «Ишимбайнефть» тресы предприятиеләренең цехтарында һәм нефть сығарыу бригадаларында хужалыҡ иҫәбе индереү эштә яҡшы һөҙөмтәләр биреүе һәм артабан был өлкәлә тағы ла ныҡыраҡ инициатива күрһәтергә кәрәклеге тураһында мәсьәлә ҡуҙғата.

Иптәш Ғ. Ғибәҙуллин Ҡыйғы районында колхоз йәштәренең спартакиадаһы уңышлы барыуы тураһында белдерә. Бындағы «Колхозник» спорт общество Челябе өлкәһе Саткинский районы спорт командаһы менән ярышырға әҙерлек алып бара.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Бишбүлек производство участкаһына ҡараған Бәләбәй урман үҫтереү станцияһы бригадаһы (бригадиры иптәш Яковчук) ағас ултыртыу планын срогынан алда 150 процентҡа еткереп үтәне.

Бригада ултыртылған ағастарҙы яҡшы итеп тәрбиәләй — ҡый үләндәренән таҙарта, тәптәрен йомшарта.

В. Кондров.

* * *

Стәрлебаш. «Урал» колхозының 12 кешенән торған төҙөү бригадаһы бөтә йыл әйләнәһенә төҙөлөш эштәрен башҡара. Ҡышҡы осорҙа ул төҙөлөш материалдары әҙерләне. Ә йәйге осорҙа төҙөү эштәре йәйелдерелде. Тимерлек һәм һарыҡтар өсөн торлаҡ төҙәлде. Улар таштан һалынды. Гоголев системаһында иген киптергес төҙәлә башланы.

В. Неюпов.

* * *

Малаяз. Салауат районындағы Һарғамыш совхозы государствоға һөт тапшырыуҙа быйыл 5 айлыҡ планды 108 процентҡа үтәне. Совхозда һөт һауып алыу байтаҡ артты. Иптәш Сантакова фуражлағы һәр бер һыйырҙан 1046 урынына 1214-әр килограмм, иптәш Юлдашева 1032 урынына 1158-әр килограмм һөт һауып алды.

Б. Кочетков.

* * *

Шишмә. Ново-Троицк МТС-ының иптәш Вахитов етәкселек иткән трактор бригадаһы «Ол-ил» колхозында 400 урынына 500 гектар пар һөрҙө. Хәҙер трактористар сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә колхозға ярҙамлашалар.

Трактор бригадаһы яҙғы осорҙа уңышлы эшләне. Ул йомшаҡ ер һөрөү иҫәбендә 1172 гектар урынына 1980 гектар ер эшкәртте.

Х. Улимаев.

* * *

Байман районы сельпо работниктәре металл һыныҡтары йыйнауҙа актив ҡатнашалар.

Муллаҡай, Эткол сельполарының работниктәре 18—20-шәр тонна металл һынығтары йыйнап тапшырҙылар. Бөтәһе район буйынса 96 тонна металл һынығы йыйналды.

И. Зарипов.

Металл һыныҡтары йыйнау буйынса воскресник

Өфө тау оборудованиеләре заводында металл һыныҡтарын йыйнау яҡшы ойошторолған.

Государство әһәмиәтендәге был серьез эштә коллектив ҙур ойошҡанлыҡ күрһәтә. Заводтың бөтә эшселәре, инженер-техник работниктәре ҡара һәм төҫлө металлар йыйнауҙа актив ҡатнаша. Күптән түгел заводтың партия һәм комсомол комитеттәре инициативаһы менән воскресник уҙғарылды. Унда бөтә коллектив ҡатнашты. Шабрин, Крыгин, Казаков, Мусин иптәштәр етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадалары айырыуса яҡшы эшләнеләр. Металл һыныҡтарын йыйнауҙа Шобухова, Львова, Вәлиева, Кондрова һәм башҡа иптәштәр өлгө күрһәттеләр.

Воскресниктә бөтәһе 50 тоннанан артығыраҡ металл һынығы йыйналды.

А. Баязитов.

Прагала Генералиссимус И. В. Сталиндең монументаль скульптураһы ҡуйыла

ПРАГА, 9 июнь. (ТАСС). Чехословакия телеграф агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 8 июнда Прагала Генералиссимус И. В. Сталиндең монументаль скульптураһын ҡуйыу буйынса эшләүсе комитеттең ултырышында Летненск[illegible] майҙанға ҡуйыласаҡ монументтең эскизы тамам раҫланған. Проекттың авторҙары — скульптор Отокар Швец, архитекторҙар Иржи Штурса һәм Власта Штурсова. Монумент [illegible]

Чехословакияның кино работниктәренә Сталин премияларын биреү

ПРАГА, 9 июнь. (ТАСС). 8 июнда Прагалағы Совет посольствоһында Чехословакияның кино работниктәре — режиссер Владимир Вачекка һәм композитор Ян Капрға Сталин премиялары бирелде. Премияләр уларға «Яңы Чехословакия» тигән төҫлө фильмды булдырыу буйынса совет кино работниктәре менән берлектә эшләгән өсөн бирелде.

Сталин премияларын биргән ваҡытта Чехословакияның премьер-министры урынбаҫары һәм [illegible] министры Шпинорский, информация һәм культура министры Копецкий, мәктәп, фән һәм искусство министры Неедлы һәм башҡа министрлыҡ, фән, культура работниктәре ҡатнашты.

СССР-ҙың Чехословакиялағы посолы М. Силин Чехословакия кино работниктәрен юғары наградаһы менән ҡотланы. Информация һәм культура министры Копецкий совет посольствоһына Чехословакия искусствоһының работниктәре менән [illegible] юғары награда өсөн СССР Хөкүмәтенә рәхмәт тапшырыуҙы һораны.

Индия общественносе Советтәр Союзының эскерһеҙ ярҙамын ҡотлай

БОМБЕЙ, 9 июнь. (ТАСС). Индияға бойҙай килтергән совет пароходтары «Краснодар» һәм «Менделеев» капитандары һәм экипаждарының члендәре ошо көндәрҙә Бомбейҙа ҙала общественносе менән осрашҡандар. Осрашыу башланыр алдынан бик күп элек зал халыҡ менән тулы булған. Совет моряктәренең залда күренеүе овация менән ҡаршыланған.

Осрашыуҙа ҡатнашҡан Бомбей общественносенең вәкилдәре совет моряктәрен йылы ҡотлағандар һәм Индия халҡына йылдам ярҙам күрһәткән өсөн совет халҡына һәм уның хөкүмәтенә рәхмәт белдергәндәр.

Индия үҙәк хөкүмәтенең вәкиле Сикханд үҙ сығышында совет пароходтарының капитандарына бойҙай килтергән өсөн рәхмәт әйткән һәм, карапттар билдәләнелгән сроктан бер аҙна элек килделәр, тигән.

Йыйылышта ҡатнашыусыларҙың күбеһе ҡул сабыуҙары аҫтында ораторҙар СССР менән Индия араһында сауҙа һәм культура бәйләнештәрен артабан үҫтереү һәм нығытыуға ышаныс белдергәндәр.

Икенсе көндә Бомбей халыҡ театрҙары прогрессив ассоциацияһының инициативаһы менән «Краснодар» бортында совет карабының экипажы өсөн Индияның милли йыр һәм бейеүҙәренең концерте ойошторолған. Концерт тамамланғас карапта булған ҡунаҡтар «Тыуған ил тураһында» совет йырын Индия телендә башҡарғандар. Бик күптәр карапттан киткән ваҡытта совет моряктәре тарафынан Индияға килтерелгән иген биртәктәрен иҫтәлек өсөн үҙҙәре менән алғандар.

Индия матбуғаты совет карапттарының килеүенә ҙур иғтибар биргән. «Фри пресс джорнал» газетаһы «Совет халҡы мохтаж булған кешеләргә ярҙам күрһәтергә һәр ваҡытта әҙер», тигән заголовка аҫтында отчет иғлан иткән.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 10 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе, 10 июнда Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәттә, Иопьчхондан, Хванчхендән, Янгудан, Пхьчженән төньяҡтараҡ райондарҙа ныҡлы атакаларҙы уңышлы кире ҡаҡтылар, Америка-Англия ғәскәрҙәрен йәнле көсөнә һәм техникаһына ҙур юғалтыуҙар килтерҙеләр, тип хәбәр итә.

10 июнда самолеттарҙың үҫеш истребителдәре дошмандың 8 самолетын атып төшөрҙөләр.

Вьетнамда һуғыш хәрәкәттәре

ШАНХАЙ, 9 июнь. (ТАСС). Вьетнам информацион агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 3 июнда Халыҡ армияһының ғәскәрҙәре Нинь-Биндән 10 километрға көньяҡ-көнбайыштараҡ урынлашҡан Нэй-Сап посын атакалағандар. Дошмандың 80 кешенән торған гарнизоны ҡоралдары менән бергә пленға төштө. Һуғыш припастары тейәлгән сплав һәм бик күп һанда хәрби снаряжение юҡ ителгән. Француздарҙың бер судноһы һыуға батырылған, ә икенсеһе — зарарландырылған. Дошмандың 50 һалдаты юҡ ителгән.

АҠШ компартияһының 11 лидерен хөкөм итеүгә ҡаршы Англия компартияһының протесе

ЛОНДОН, 9 июнь. (ТАСС). «Дейли уоркер» газетаһы Гарри Поллиттең Американың Лондондағы посольна хатын иғлан иткән. Был хатта Поллит посолдан Англия компартияһы исполкомынан депутация ҡабул итеүҙе һорай. Англия компартияһы АҠШ компартияһы етәкселәренең эше буйынса АҠШ верховный судының күптән түгел булған ҡарарына ҡаршы ҡырҡа протест белдерергә уйлай.

Поллит хатында, был ҡарар «демократия һәм һүҙ ирке принциптарына һөжүм булып тора һәм бөтә донъяла демократик общественносте протесын тыуҙырасаҡ», тип әйтелә.

«Беҙ, — тип яҙа Поллит, — верховный судтың ике члене ҡабул ителгән ҡарарҙы ҡламаны, тип билдәләйбеҙ. Беҙ был, ғәйепләү дәлилдәренең нигеҙһеҙлеген күрһәтә, тип иҫәпләйбеҙ һәм шуға күрә был айҡанлы беҙ аһарға үҙебеҙҙең серьез тәҡдимдәребеҙҙе тыңларға һеҙҙән ризалыҡ биреүегеҙҙе ныҡышып һорайбыҙ».

Болгарияла медицина академияһының эшмәкәрлеге

СОФИЯ, 9 июнь. (ТАСС). Совет медицина институттарының тәжрибәһенән файҙаланып, Болгарияла Червенков исемендәге медицина академияһы ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеген киң йәйелдерә. Быйтыр академия 500 фәнни хеҙмәт баҫып сығарҙы. Бөйөк рус ғалиме Павлов хеҙмәттәрен өйрәнеүгә айырыуса иғтибар бирелә. Академияла павловсы 40 студенттәр түңәрәге һәм семинарҙары булдырылған, шулай уҡ методик кабинет ойошторолған.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Колхоз ауылында яңы төҙөлөштәр

Яңауыл районының Крупская исемендәге колхозында яңы төҙөлөштәргә ҙур әһәмиәт бирелә. Колхозда һуңғы йылдарҙа ғына яңы һыу тирмәне, клуб, магазин, инженер Гоголев системаһындағы иген киптергес, 100 баш сусҡа һыйҙырышлы саман кирбестән торлаҡ төҙәлде.

Колхоздарҙы эрәшеүҙе ҙур төҙөлөш эштәрен башҡарырға, төҙеүселәр бригадаһының үҫтереүгә мөмкинлектәр тыуҙырҙы. Колхозда иптәш Х. Миннеғәлиев етәкселегендә 12 кешенән торған төҙөлөш бригадаһы эшләй. Ул быйыл правление конторһын, кирбес заводын, спорт майҙанын, малдар өсөн саман кирбесенән ике торлаҡ, иген киптергес, һыу кәсе менән башҡа бер [illegible] эшләне. Был төҙөлөштәр өсөн 375 кубометр ағас материалдары әҙерләнде.

Бригада члендәре — Х. Хакимов, Ш. Шарипов, Х. Мусин һәм башҡа иптәштәр эштә айырыуса тырышлыҡ күрһәтәләр.

Ф. Исламов.

Яңы китаптар

Башҡортостан Государство издательствоһы һуңғы көндәрҙә башҡорт телендә түбәндәге китаптарҙы баҫып сығарҙы, китап магазиндарына тапшырҙы:

И. Сталин, «Марксизм һәм милли мәсьәлә», тәржемәсе Ә. Кетов, тәржемәнең редакторы Ғ. Сабашев, күләме 72 бит, тиражы 5.000 дана, хаҡы 1 һум 50 тин.

З. Аюхан, «Шифа», күләме 111 бит, тиражы 7.800 дана, хаҡы 1 һум 50 тин.

Х. Усман, «Башҡорт теле», башланғыс мәктәптең беренсе класы өсөн дәреслек, күләме 92 бит, тиражы 6000 дана, хаҡы 1 һум 15 тин.

Е. С. Березанская, «Арифметика мәсьәләләре һәм күнегеүҙәр йыйынтығы», өсө йыллыҡ һәм урта мәктәптәрҙең 5 һәм 6 класстары өсөн, тәржемәсе М. Хәкимов, тәржемәнең редакторы З. Байрамғол, күләме 304 бит, тиражы 15 мең дана, хаҡы 1 һум 50 тин.

Н. А. Шапошников һәм Н. К. Вальцев, «Алгебра мәсьәләләре йыйынтығы», беренсе киҫәк, өсө йыллыҡ һәм урта мәктәптең 6—8-се класстары өсөн, тәржемәсе Х. Ҡәҙермәт, тәржемәнең редакторы Ә. Байрамғол, күләме 166 бит, тиражы 15 мең дана, хаҡы 2 һум 20 тин.

Н. Рыбкин, «Геометрия мәсьәләләре йыйынтығы», урта мәктәптең 6—9 класстары өсөн, I киҫәк, планиметрия, тәржемәсе К. Ғәлимов, тәржемәнең редакторы З. Ҡәҙермәт һәм Ә. Байрамғол, күләме 126 бит, тиражы 15 мең дана, хаҡы 1 һум 50 тин.

Н. Рыбкин, «Геометрия мәсьәләләре йыйынтығы», урта мәктәптең 9 һәм 10-сы класстары өсөн, II киҫәк, стереометрия, тәржемәсе Х. Ҡәҙермәт, тәржемәнең редакторы Ә. Байрамғол, күләме 110 бит, тиражы 3000 дана, хаҡы 1 һум 85 тин.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Киң рәтле сәсеүлектәрҙе эшкәртеүҙе механизациялаштырыу

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү күп хеҙмәт һалыуҙы талап итә торған эш. Киң рәтле сәсеүлектәрҙе һәм пропаш культураларҙы тәрбиәләүҙә хеҙмәт айырыуса күп һалына. Шуға күрә уларҙы тәрбиәләүҙе механизациялаштырыу ҙур әһәмиәткә эйә.

Пропаш культуралар — шәкәр сөгөлдөре, көнбағыш, күк һағыҙ культуралары, киң рәтле итеп сәселгән тары, йәшелсә, картоф, тамыр аҙыҡтар һәм башҡа сәсеүлектәр республикабыҙҙа ҙур ғына урын алып тора. Бындай шарттарҙа сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе механизациялаштырыуҙың мөһимлеге тағы ла арта.

Беҙҙең республикабыҙ колхоздарында киң рәтле сәсеүлектәрҙе утау эше, күбеһенсә, ҡул көсө менән башҡарыла. Бер гектар киң рәтле сәсеүлекте утау өсөн 7—20 кеше-көн талап ителә. Ә был иңдә иң тыҙыу эш осоронда эш ваҡытын әрәм итеү булып тора.

Айырым колхоздарҙың бөтә тырыштыҡтарына ҡарамаҫтан, ҡайһы бер саҡтарҙа пропаш культураларҙың ҙур майҙандары үҙ ваҡытында уталмай, үҫемлектәр һирәкләндерелмәй, уларҙы ҡый үләндәре баҫып китә һәм һөҙөмтәлә урожай түбән була.

МТС механизаторҙарының бурысы пропаш культураларҙың рәт араларын эшкәртеү, ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш, шулай уҡ айырым культураларҙы һирәкләндереү эштәрен механизациялауҙан тора. Тәгәрмәсле тракторға тағылған культиватор менән рәт араларын эшкәртеүсе иҡе кеше 120—150 кеше башҡарған эште үтәй ала.

Пропаш культураларҙы эшкәртеүҙе дөрөҫ ойошторор өсөн техник ҡағиҙәне белергә һәм һаҡларға кәрәк. Сөнки шунһыҙ культиватор менән эш итеү сәсеүлектәргә зарар ғына килтерәсәк, ул утау урынына, үҫемлектәрҙе киҫтерәсәк. Трактор культиваторы менән эшләү өсөн беренсе мөһим шарт — сәсеүлек рәттәренең дөрөҫ булыуында тора. Сәсеүлектең рәт аралары киңлеге сәсеү агрегаттарының һәм культиваторҙарҙың алымдары киңлегендә була. Культиваторҙарҙың тәпеләрен дөрөҫ һайлап алыу һәм дөрөҫ урынлаштырыу талап ителә. Шуның менән бергә, культиватор тәпеләрен урынлаштырғанда рәттәрҙең һәр ике яғынан 7—12 сантиметр киңлектә һаҡлыҡ зонаһы ҡалдырыла. Бөтә эшкәртелмәй торған полоса 14—24 сантиметр тәшкил итә.

Пропаш культураларҙың рәттәрен эшкәрткәндә беренсе науботта У—2 тракторҙарын файҙаланырға кәрәк. Тракторҙың руле төҙәк булырға һәм люфте 12—15 градустан артмаҫҡа тейеш. У—2 тракторы булмағанда, СХТЗ тракторын файҙаланырға мөмкин. 44,5 сантиметр киңлектә рәт аралары булған сәсеүлектәрҙе эшкәрткәндә был тракторҙың артҡы тәгәрмәсе яңынан йыһазландырыла, йәғни ҡулайлаштырыу үткәрелә. Рәт араларының киңлектәре 60—80 һәм 90 сантиметр булған сәсеүлектәрҙе эшкәрткәндә СХТЗ тракторына ҡулайлаштырыу талап ителмәй.

Рәт араларын эшкәртеүҙә иң күп ҡулланыла торған культиваторҙарҙан АУТК һәм КУТС культиваторҙары иҫәпләнәләр. АУТК культиваторы ике яҡлы, универсаль, ғәҙәттә, 27 сантиметр киңлектә тәпеле була. КУТС культиваторы тәпеләре 27 һәм 14 сантиметр киңлектә, шулай уҡ бер яҡлы йөҙлө була.

Эште башлауҙан элек культиваторҙы ентекле рәүештә ремонтларға һәм көйләргә кәрәк. Тәпеләр яҡшы үткерләнергә тейеш. 60 сантиметр киңлектәге рәт аралы сәсеүлектәрҙе эшкәрткәндә 27 сантиметр киңлектәге тәпе ҡулланыла. 45,5 сантиметр киңлектә рәт аралы шәкәр сөгөлдөрө, күк һағыҙ һәм башҡа киң рәтле сәсеүлектәрҙе эшкәрткәндә бер яҡлы һәм 14 сантиметрлы ике яҡлы тәпеле культиваторҙар ҡулланыла.

Культиваторҙарға бер нисә тәпеләр ҡуйыуҙа уларҙың бер-береһенә эштә ярҙам итеүҙәрен күҙәтергә кәрәк. Тәпе аралары үҫемлектәр менән тығылмаһын өсөн тәпеләр бер-береһенән буйға 30—40 сантиметр алыҫлыҡта тора. Культиватор тәпеләре бер үк тәрәнлектә, уртаса 6—8 сантиметр тәрәнлектә йөрөргә тейештәр. Шуның менән бергә, эш ваҡытында тәпеләрҙең дөрөҫ эшләүҙәрен һәм эштең сифатын даими күҙәтергә кәрәк.

Культиватор тәпеләрен сәсеүлектәрҙең рәттәренә ҡарата урынлаштырыу махсус ҡулайлама ярҙамында үткәрелә. Ул эш баҫмыһында тағы ла яҡшыртыла төшәлә. Бында культиватор тәгәрмәстәре сәскес тәгәрмәстәре эҙенән йөрөргә тейеш.

Культиваторға ике төрлө тәпе ҡуйылып, тауҙа бер яҡлы тәпеләр һәм һуңынан ике яҡлы тәпеләр урынлаштырыла. Ситке тәпеләр йәнәшә рәт аралығын артылмалай эшкәртеп барырға тейештәр.

Пропаш культураларҙы тәрбиәләүҙә сәсеүлекте букетировкалау, йәғни үҫемлектәрҙе һирәкләндереү мөһим сара булып тора. Был эш трактор культиваторы менән башҡарыла. Ул сәсеүлек рәттәренең арҡырыһына культивациялауҙан тора.

Сәсеүлектә һәр бер погонный метр майҙанда үҫемлектәр бер тигеҙ ҡуйылыҡта булғанда ғына һирәкләү үткәрелә. Үҫемлектәр һирәк булып сыҡҡанда һирәкләү үткәрелмәй. Бында айырым ҡуйы урындарҙы һирәкләү ҡул менән башҡарыла.

Культиватор менән һирәкләү өсөн һәр бер погонный метр майҙанда, мәҫәлән, көнбағыш кәмендә 15 үҫемлек булырға тейеш. Әгәр ул 15-тән дә кәм булһа, 40 сантиметр киңлегендә киҫтерелә һәм 25 сантиметр оҙонлоғонда букет, йәғни үҫемлектәр ҡырҡтырылмаған урын ҡалдырыла. Шәкәр сөгөлдөрөн һирәкләүҙә культиваторҙың ҡырҡтырыу киңлеге 14 сантиметр, букет оҙонлоғо 28 сантиметр була. Бында букетта 14 сантиметр алыҫлыҡта өсәр үҫемлек ҡалдырыла.

Культиватор менән һирәкләү үткәрелгәндә ул маркер менән йыһазландырыла. Һирәкләү тура һыҙыҡ буйынса үткәрелә. Букет аралыҡтарын эшкәрткәндә лә, рәт араларын эшкәрткәндәге кеүек, тәпеләр 6—8 сантиметр тәрәнлектә йөрөтәлә.

Киң рәтле сәсеүлектәрҙе ике йүнәлештә эшкәртеү пропаш культураларҙың урожайлылығын күтәрә. Шуға күрә был сараны республика колхоздарында киң ҡулланырға кәрәк. МТС механизаторҙарының бурысы пропаш культураларҙы эшкәртеүҙең государство планын утәү һәм арттырып үтәүҙән тора. Был маҡсатта МТС-тарҙағы бай техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙы ойошторорға кәрәк.

Агроном **Ғ. Ҡаныш**ев.

„ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН“ ГАЗЕТАҺЫНА 1951 ЙЫЛҒА ПОДПИСКА ҠАБУЛ ИТЕҮ ДАУАМ ИТӘ

Подписка „Союзпечать“тең ҡалаларҙағы бүлектәрендә, связь бүлектәрендә һәм агентстволарында, подписка ҡабул итеү пункттарында, шулай уҡ предприятиеләрҙә, учреждениеләрҙә, совхоздарҙа һәм колхоздарҙа подписка буйынса общественный уполномоченныйҙар тарафынан ҡабул ителә.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында — Луначарский исемендәге баҡсала — «ЛУТОНИНДӘР СЕМЬЯҺЫ». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СПОРТ НАМЫҪЫ».

«Салауатта» — «ҠАҘАҠ ГАЛОТА ТАРАҺЫНДА УПҘАР».

«Уралда» — «СПОРТ НАМЫҪЫ».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «ҠЫПЫУ КЕШЕЛӘР».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02518 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 115 (8832) 1951 йыл 13 июнь шаршамбы

Хаҡы 20 тин.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА.
Башҡорт АССР-ы Миәкә районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС, совхоз работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең йөкләмәһе (1-се бит).
А. Петров. — Металлургтарҙың колхоздарға ярҙамы (1-се бит).
И. В. Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән хеҙмәтенең иғлан ителеүенә бер йыл тулыуға ҡарата (1-се бит).
ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты пленумы (2-се бит).
МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ. Общественный малсылыҡты үстереү өсөн көрәштә ныҡ ағыл эшләү (3-сө бит).
А. Лаврецкий. — В. Г. Белинский. (3-сө бит).
Р. Валиев. — Ярҙылы етәкселек һөҙөмтәләре (3-сө бит).
А. Әхмәров. — Колхоз баҡсаларында (3-сө бит).
Республика колхоздарында пар һөрөү барышы (4-се бит).
Я. Соколов. — Баҫыу һаҡлаусы урман полосаларында — әлегә торбиз (4-се бит).
Чехословакияла И. В. Сталин монументын тантаналы асыу (4-се бит).
Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Колхоз һәм совхоз малсылығы өсөн аҙыҡ әҙерләү—киҫектергеһеҙ мөһим эш

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа быйыл общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын үтәү, малдарҙы юғары сифатлы төрлө аҙыҡтар менән тулыһынса тәьмин итеү—республика партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының киҫектергеһеҙ бурысы булып тора.

Партия һәм хөкүмәт общественный малсылыҡты аҙыҡтар менән тәьмин итеү эшенә ҙур иғтибар бирәләр һәм бесән сабып йыйнау, мал аҙығы силослау һәм мал аҙығы культуралары сәсеүлектәрендә рәттәрҙе эшкәртеүҙе механизациялаштырыу буйынса колхоздарға, МТС-тарға һәм совхоздарға ҙур ярҙам күрһәтәләр.

Быйыл республикабыҙға өҫтәмә рәүештә байтаҡ һандарҙа үҙе йөрөй торған һәм ат менән йөрөтөлә торған бесән саҡҡыстар, трактор һәм ат менән йөрөтөлә торған бесән йыйғыстар, силос башнялары, малсылыҡта күп хеҙмәт һалыуҙы талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу өсөн кәрәкле булған оборудованиелар индереләләр. Беҙҙең бурысыбыҙ уларҙы колхоздарға, МТС-тарға һәм совхоздарға йылдам ташып алыуҙан һәм уларҙы максималь етештереүсәнлектә файҙаланыуҙы тәьмин итеүҙән тора.

Партия һәм хөкүмәт, көндәлек ярҙам күрһәтеп, урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары етәкселәренән мал аҙығы етештереүҙе ойоштороуҙағы серьез етешһеҙлектәрҙе киҫекмәҫтән бөтөрөүҙә бөтә сараларҙы күреүҙе, тәбиғи болонлоҡтарҙың һәм көтөүлектәрҙең урожайлылығын күтәреү планын һис һүҙһеҙ үтәүҙе һәм арттырып үтәүҙе тәьмин итеүҙе талап итәләр.

Партия һәм хөкүмәттең был талабын үтәү һәм колхоздарҙың, совхоздарҙың общественный малдарын юғары сифатлы аҙыҡтар менән тәьмин итеү — партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының почетлы һәм киҫектергеһеҙ бурысы ул.

Һуңғы көндәрҙә булып үткән ямғырҙар үләндәрҙең йылдам үҫеүенә ярҙам иттеләр. Шуға күрә республиканың колхоздары, совхоздары һәм МТС-тары быйыл бесән сабыуҙы һәм мал аҙығы силослауҙы, былтырғыға ҡарағанда, иртәрәк башларға тейештәр. Шулай ҙа ҡайһы бер райондарҙың етәкселәре быйылғы йылдың үҙенсәлеген иҫәпкә алмайҙар һәм бесән сабыуға һәм мал аҙығы силослауға әҙерлек эштәрен юл ҡуйылғыһыҙ аҡрын алып баралар. Мәҫәлән, Асҡын, Байҡыбаш, Мәләүез, Стәрлетамаҡ райондарының колхоздары бесән сабыу машиналарын ремонтлау планын әле бары яртылаш ҡына үтәнеләр. Миәкә, Степной, Баймаҡ, Матрай МТС-тары (директорҙары Бикметов, Левченко, Ҡалиров, Махнев иптәштәр) бесән саҡҡыс машиналарҙы ремонтлау планын өҙҙөләр.

Беҙҙең колхоздарыбыҙҙың һәм совхоздарыбыҙҙың малсылыҡ өсөн төп аҙыҡ массаһын тәбиғи болонлоҡтарҙан һәм көтөүлектәрҙән алыуҙары бөтәһенә лә билдәле. Үҙ ваҡытында йыйнап алынған бесән туҡлыҡлығы яғынан концентрат аҙыҡтар кимәленә яҡынлаша.

Бөтә райондарҙа, колхоздарҙа һәм МТС-тарҙа бесән сабыуға һәм мал аҙыҡтары силослауға әҙерлектәге ҙур етешһеҙлектәрҙе һис киҫекмәҫтән бөтөрөү һәм был эштә үҙған йылдарҙағы хаталарға юл ҡуймау талап ителә. Үҙған йылдарҙа айырым райондарҙа болонлоҡтар сабылмайынса ҡалдырылды, силослау планы үтәлмәне, күп кенә МТС-тарҙың директорҙары колхоздарҙа мал аҙыҡтары туплауҙа үҙҙәрен яуаплы һанамадылар.

Мал аҙыҡтары әҙерләү эшенең уңышы ауыл хужалығы органдарының колхозсыларҙы, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм совхоз эшселәрен бесән сабыу һәм силос һалыу эшенә нисек ылыҡтыра белеүҙәренә бәйле булып тора. Уларҙың бесән сабыуҙың тәүге көндәренән алып планды үтәгәнгә тиклем тулыһынса ҡатнашыуҙарын тәьмин итергә кәрәк. Был эштә колхоздарҙың, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың механизмдарын максималь файҙаланыу талап ителә.

Һәр бер колхозда, совхозда һәм МТС-та бесән сабыу һәм силос һалыу эштәре буйынса бөтә сараларҙы ентекле әҙерләргә, эш пландары төҙөргә, колхоздарҙың һәм совхоздарҙың бригадаларына болонлоҡ участкалары беркетергә кәрәк. Бесән сабыу һәм мал аҙыҡтарын силослау эштәрен үткәреүҙә эшләп сығарыуҙың прогрессив нормаларын ҡулланырға һәм республика Министрҙар Советы тарафынан мал аҙыҡтары әҙерләү буйынса билдәләнгән биш көнлөк заданиеларҙың һис һүҙһеҙ үтәлеүен тәьмин итергә кәрәк.

Колхоздарҙың, МТС һәм совхоздарҙың етәкселәре, бесән саҡҡыстарҙы һәм мал аҙыҡтары әҙерләүҙең башҡа машиналарын ремонтлауҙың сифатына, шулай уҡ ҡул менән бесән сабып йыйнау инвентарҙары менән тәьмин ителеүгә айырыуса иғтибар биреп, һис киҫекмәҫтән бесән сабып йыйнауға әҙерлекте тикшереүҙе ойошторорға тейештәр.

Бесән сабыуҙы һайланма рәүештә башларға кәрәк, бөтә болонлоҡ массивтарында үләндең өлгөрөүен көтөп торорға ярамай. Сабылған бесәндең тиҙ кибеүе тәьмин ителергә тейеш. Бесәнде сабыу, йыйнау һәм кәбәнгә һалыу эштәре араһында өҙөклөккә юл ҡуйырға ярамай.

Һутлы аҙыҡтарҙың ҙур әһәмиәтле булыуын иҫкә алып, һәр бер колхоз һәм совхоз силос һалыу планын һис һүҙһеҙ үтәргә тейеш. Иртә сроктарҙа мал аҙығы силослауҙы ойошторорға кәрәк. Һәр бер колхоз һәм совхоз урожай йыйнауҙы башлауға тиклем силос һалыуҙың планын кәмендә 90 процентҡа үтәүҙе тәьмин итергә тейеш.

Силостың боҙолоуына юл ҡуймау маҡсатында силос массаһын әҙерләмәйенсә һалыуға юл ҡуйырға ярамай. Силос соҡорҙары һәм траншеялары яҡшы эшләнгән булырға тейеш. Мал аҙыҡтары силослауҙа эштең сифатлы башҡарылыуына ҡаты контроль булдырырға кәрәк.

Бесән сабыу һәм мал аҙыҡтары силослауҙы механизациялаштырыу буйынса эштәрҙе ойоштороу менән бергә, ҡул менән бесән сабып йыйнауҙы киң ойошторорға кәрәк. Бының өсөн һәр бер бригадала салғысылар әҙерләргә, етерлек һанда салғылар, һәнәктәр, ҡул тырмалары һәм башҡа инвентарҙар әҙерләргә һәм ремонтларға кәрәк.

Колхозсыларҙың һәм совхоз эшселәренең болондарҙа массовый эшләгән урындарында общественный аҙыҡланыу ойошторолорға тейеш. Мал аҙыҡтары әҙерләүҙә колхозсыларҙың һәм совхоз эшселәренең заданиеларҙы арттырып үтәүҙәре өсөн хөкүмәт тарафынан билдәләнгән бүләкләү сараларын киң ҡулланырға кәрәк.

Быйыл беҙҙең колхоздарыбыҙға, совхоздарыбыҙға һәм МТС-тарыбыҙға бесән сабыуҙы һәм силос һалыуҙы урожай йыйнауға тиклемге ваҡытта үткәрергә һәм үҫә барған малсылыҡты юғары сифатлы аҙыҡтар менән тулыһынса тәьмин итергә һәм государствоға бесән тапшырыу йөкләмәһен срогынан алда үтәргә бөтә мөмкинлектәр бар.

ВКП(б) Өлкә комитетының ошо көндәрҙә булып үҙған пленумы «Республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерлек һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында» мәсьәлә ҡараны һәм ҡарар ҡабул итте. Пленумдың был ҡарары ауыл партия ойошмаларының бөгөнгө боевой эш программаһы булып тора.

Бөтә колхоздарҙа, совхоздарҙа һәм МТС-тарҙа ауыл хужалығын артабан күтәреү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерәйек. Был ярышта общественный малдар өсөн ҡышҡа етерлек бесән, силос, япраҡ һәм башҡа ҡиммәтле аҙыҡтарҙы тулы талаптар күләмендә әҙерләүҙе тәьмин итәйек!

Беренсе ҡат утау эштәре тамамланды

Боҙаяҙ. (Телефон аша). Сталин исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре (председателе иптәш Диваев) утау эштәрендә ҙур ойошҡанлыҡ күрһәтәләр. Колхоз баҫыуҙарында көн һайын 70 — 80 кеше эшләй. Иптәш Фаизов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы бойҙай, һоло культураларын беренсе тапҡыр утауҙы уңышлы тамамланы. Урман полосаларын тәрбиәләүгә лә серьез иғтибар бирелә.

«Правда» колхозында ла яҙғы ашлыҡ культураларына беренсе тапҡыр утау үткәрелде. Бөтәһе 600 гектарҙан артыҡ майҙанда һоло, бойҙай культуралары уталды. Алдынғы колхозсыларҙан Рауза Аҡбашева, Фәрхиә, Рәшиҙә Уразбахтина иптәштәр көн һайын икешәр норма эшләйҙәр.

Бесән сабалар

Республиканың һөт-сусҡасылыҡ тресы совхоздары быйыл тупаҫ мал аҙығы әҙерләү эшенә үткән йылға ҡарағанда 10 көнгә элек башланылар.

Пиәк совхозы 500 гектар майҙандың үләнен сабып, 1030 центнер бесән эҫкертләне лә инде. Шулай уҡ Зиянчура совхозы 300, Дим, Арслан, Мораптал совхоздары ла 100-әр гектар бесән саптылар.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА



Республикабыҙҙың башҡалаһы Өфөлә яңы йорттар төҙөү эше бара.

Һүрәттә: яңы төҙөлештәге башнялар краны Ленин урамындағы ике ҡатлы мәктәпте төҙөүҙә.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Башҡорт АССР-ы Миәкә районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС һәм совхоз работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Беҙ, колхозсылар, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре 1951 йылға ҡарата түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ:

13000 гектар майҙанда арыштың һәр гектарынан 100-әр бот, 27000 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр гектарынан 100-әр бот, 2500 гектар майҙанда ҡара бойҙайҙың һәр гектарынан 70-әр бот, 3000 гектар майҙанда тарының һәр гектарынан 80-шәр бот, 2200 гектар майҙанда көнбағыштың һәр гектарынан 55-әр бот урожай алырға.

Общественный малдар һанын, 1950 йылға сағыштырғанда, йылҡылар буйынса 19 процентҡа, мөгөҙлө эре малдар буйынса 27 процентҡа, һарыҡтар һәм кәзәләр буйынса 38,7 процентҡа, сусҡалар буйынса 20 процентҡа һәм ҡоштар буйынса 6 тапҡырға арттырырға.

Фураждағы һәр бер һыйырҙан 1800-әр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 3-әр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы, һәр бер тауыҡтан уртаса 65-әр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

Государствоға игенде тапшырыу планын 30 сентябргә үтәргә. Малсылыҡ продукттары тапшырыуҙың государство планын 7 ноябргә үтәргә һәм 1952 йыл иҫәбенә авансҡа 860 центнер ит, 100.000 литр һөт тапшырырға.

Ошо йөкләмәләрҙе алып, беҙ, Миәкә районы колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре, был йөкләмәнең үтәләсәгенә намыҫ менән ышандырабыҙ.

Йәшәһен аҡыллы юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ бөйөк Сталин!

Йөкләмә Миәкә районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС һәм совхоз работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Металлургтарҙың колхоздарға ярҙамы

Белорет ҡалаһындағы промышленность предприятиелары быйыл колхоздарға практик ярҙам күрһәтеүҙе яҡшыртыу ниәтендә күп кенә саралар күрҙеләр. Металлургия, ҡорос-сым һәм «Автотрактородеталь» заводтарының коллективтары яҙғы сәсеүгә әҙерлек һәм яҙғы сәсеү эштәрен уңышлы үткәреү буйынса колхоздарға күп кенә шефлыҡ ярҙамы күрһәттеләр.

Ҡаланың партия, совет, общественный ойошмалары яҙғы сәсеү эштәре ваҡытында колхозсылар араһында культура-ағартыу эштәре алып барҙылар. Молотов исемендәге әрәләтелгән колхозда ВКП(б) ҡала комитетының лекторы иптәш Кочнев халыҡ-ара хәл тураһында лекция һөйләне. Шул уҡ колхозда «Автотрактородеталь» заводының йәш эшселәре колхозсыларға ҙур концерт күрһәттеләр.

Белорет металлургтары культура дворецының үҙ эшмәкәр түңәрәге члендәре Сәрмән МТС-ында йыш булалар. Күптән түгел культура дворецы директоры иптәш Әхмәтшин механизаторҙарға совет патриотизмы тураһында лекция һөйләне. Үҙ эшмәкәр түңәрәк тарафынан механизаторҙарға концерт бирелде. Урындағы үҙ эшмәкәр түңәрәктәргә ижади ярҙам күрһәтелде.

Ҡорос-сым заводында ауыл хужалығына культура ярҙамы күрһәтеү буйынса ойошторолған махсус бригада Сталин исемендәге әрәләтелгән колхозды хеҙмәтләндерә. Завод партия ойошмаһының лекторҙары колхозсыларға коммунизмдың бөйөк төҙөлештәре тураһында лекция һөйләйҙәр, көндөң актуаль темаларына беседалар үткәрәләр.

Тик яҙғы сәсеү осорында ғына ҡаланың общественный ойошмалары колхоздарға 15-тән артыҡ сығыш яһанылар. Был сығыштарҙа концерттар күрһәтелде, лекциялар үткәрелде. Металлургтар колхоздарға ярҙам күрһәтеүҙе хәҙер ҙә дауам итәләр.

А. Петров,

ВКП(б)-ның Белорет ҡала комитеты инструкторы.

Юғары белемле колхоз председателдәре

Стәрлетамаҡ. Райондағы ваҡ колхоздарҙы берләштереү уңайы менән колхоздарға етәкселек эшенә ауыл хужалығын яҡшы белеүсе, ҙур тәжрибәле ойоштороусылар килделәр. Мәҫәлән, Хрущев исемендәге колхоздың председателе иптәш Верещагин 15 йыл буйы баш зоотехник булып эшләгән. Ул ауыл хужалығы институтын тамамлаған.

Калинин исемендәге әрәләтелгән колхоздың председателе иптәш Боков институтта ситтән тороп уҡып, уны быйыл тамамлай. Ул председатель булып ошо йылдың март айында ғына эшләй башлауына ҡарамаҫтан, колхозда хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороп, яҙғы сәсеү планын ҡыҫҡа срокта уңышлы тамамланы. Хәҙер колхоз члендәре сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, бесән сабыуға һәм урожай йыйнауға әҙерлек эштәрен алып баралар.

А. Клементьев.

Металл һыныҡтары йыйнайҙар

Ҡара һәм төҫлө металл һыныҡтарының металлургия промышленноҫында булған ҙур әһәмиәтен аңлап, «Главвторчермет»тең Өфө цехы коллективы иптәш Вәлиуллин етәкселегендә социалистик ярыш йәйелдерҙе. Ул металл йыйнау һәм йыйналған металлы металлургия заводтарына тиҙерәк оҙатыу өсөн көрәшә.

Ағымдағы йылдың апрель айында ғына производство программаһынан тыш 139 тонна ҡара металл оҙатылды.

Скважиналарҙың үҙенсәлектәрен өйрәнәләр

Беҙҙең промысла операторҙары һәр бер скважинаның үҙенсәлеген өйрәнеп эшләйҙәр. Һөҙөмтәлә улар нефть сығарыу эшендә ҙур ғына уңышлыҡтарға өлгәшәләр.

Миҫал өсөн оператор иптәш Йәғәфәровты ғына алайыҡ. Ул, икенсе участканан беренсе участкаға күсерелгәс, үҙенең эшен, бөтәһенән элек, скважиналарҙың үҙенсәлеген өйрәнеүҙән башланы. Вахтаны ҡабул итеп алғас, иптәш Йәғәфәров 91/36 номерлы скважинаның нефть биргәнен тикшерҙе. Скважина бушҡа эшләй ине. Ул шунда уҡ эштән туҡтатылды. Был скважинаға, эшләмәй ултырғас, ер аҫты ремонты үткәреү эше талап ителә ине. Ләкин тәжрибәле оператор ремонт үткәреү өсөн подъемникте һәм 3 кешене килтереүҙән баш тартты.

— Туҡтағыҙ, — тине ул, — скважинаның үҙенсәлеген ныҡлап тикшерәйек. Бәлки уларҙан башҡа ла ҡотола алырбыҙ.

Ныҡлап тикшергәндән һуң, скважинаның насосы төҙөк булып, уның ваҡыты-ваҡыты менән нефть бирмәй бушҡа эшләү үҙенсәлеге беленде. Ике сәғәттән һуң скважина яңынан нефть бирә башланы. Шулай итеп, оператор иптәш Йәғәфәров подъемникте һәм өс эшсе-ремонтсыны, бында килтермәйенсә, уларҙы икенсе эштә файҙаланырға мөмкинлек бирҙе. Был, йөҙҙәрсә һумға экономия яһау, тигән һүҙ.

«Ишембайнефть» тресының башҡа промыслаларында ла операторҙар иптәш Йәғәфәровтың өлгөһөндә, скважиналарҙың үҙенсәлектәрен өйрәнеп, эшләй башланылар.

М. Тимербулатов,

«Ишембайнефть» тресының өсөнсө промыслаһы операторы.

Һүрәттә: коммунист-стахановсы иптәш Г. Сатлыҡов Өфөнең Глумилино районында завод эшселәре өсөн торлаҡ йорто төҙөү эшендә. Ул үҙенең айлыҡ нормаһын 300 — 350 процентҡа үтәй.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Яңы мөмкинлектәр, яңы эш пландары

Десяткин ГЭС-ын төҙөүҙә беҙҙең колхоздың члендәре актив ҡатнаштылар. ГЭС эксплуатацияға тапшырылғас, колхозға 60 киловатт электр энергияһы бирелде. Был энергия колхозсыларҙың йорттарын һәм учреждениеларҙы яҡтыртыуҙан тыш, күп кенә ауыл хужалығы эштәрен дә механизациялаштырыуға мөмкинлек бирҙе. Урожай йыйнау кампанияһында беҙ электр-энергияһы ярҙамында ашлыҡ һуғасаҡбыҙ.

Электрләштереүҙең роле малсылыҡ фермаларында ла ҙур. Тамыр аҙыҡтарҙы, бесән һәм һалам турау өсөн электр көсө ярҙамында «Голиаф» маркалы машина менән башҡара башланыҡ. Һарайҙарға электр энергияһы индерелгәс, зоотехник ҡағиҙәләр тулыһынса һаҡлана. Һөҙөмтәлә малдарҙың продуктивлектәре байтаҡ артты.

Колхоз тормошона электр энергияһының инеүе колхозсыларға төҙөлеш эштәре менән ныҡлап шөғөлләнергә яңы мөмкинлектәр бирҙе. Беҙ, колхоздың экономик көсөн иҫәпләп, быйыл кирбес, эзбиз, алебастр заводтарын киңәйтергә һәм эш процестарын механизациялаштырырға ҡарар иттек.

Беҙҙең эш пландарыбыҙ ҙур: киләсәктә электр көсөн хужалыҡта тағы ла тулыраҡ файҙаланасаҡбыҙ. Оҙаҡламай май һығыу заводы һәм тирмән электр ярҙамында эшкә башлаясаҡ. Унан һуң, колхоз келәттәрендә лә бөтә эште механизациялаштырасаҡбыҙ.

Быларҙың бөтәһе лә беҙҙең колхоздың артабанғы күтәрелешенә, уның экономик нығыуына, колхозсыларҙың культура-тормош кимәлдәрен артабан күтәреүгә яңы шарттар тыуҙыра.

К. Шутов,

Бөрө районы, Буденный исемендәге колхоздың председателе.

И. В. Сталиндең „Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре“ тигән хеҙмәтенең иғлан ителеүенә бер йыл тулыуға ҡарата

СССР Фәндәр Академияһының президенты академик А. Н. Несмеянов менән беседа

Марксизм-ленинизмдың бөйөк идеялары нигеҙендә ижади үҫтерелеүсе совет фәне беҙҙең халҡыбыҙҙың коммунизмды еңеүе өсөн, бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәшендә ҡеүәтле ҡорал булып тора. Иптәш И. В. Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән гениаль хеҙмәте совет фәненең үҫешенә яңы этапты асты.

Был хеҙмәт — марксизмды үҫтереүгә күренекле вклад ул.

Иптәш И. В. Сталиндең хеҙмәте тел ғилеме өлкәһендә ысын переворот яһап ҡына ҡалманы, бәлки философияны, тарихты, әҙәбиәтте өйрәнеүҙе, государство һәм хоҡуҡ теорияһын үҫтереүҙең артабанғы юлдарын билдәләне. Хәҙерге бөтә тәбиғәт белеме фәне өсөн дә уның беренсе дәрәжәләге әһәмиәте бар.

Беренсе нәүбәттә иптәш И. В. Сталин хеҙмәттәре нигеҙендә беҙҙең тел ғилемен өйрәнеүселәребеҙҙең бөтә эше ҡайтанан ҡоролдо.

СССР Фәндәр Академияһының тел ғилеме институты, белемдең башҡа тармаҡтарының вәкилдәре һәм мәғариф работниктәре менән хеҙмәттәшлек итеп, совет тел ғилеменең айырыуса актуаль проблемаларын эшләүгә башланы.

Юғары һәм урта мәктәптә тел уҡытыу программалары һәм уҡыу пландары ҡайтанан ҡаралды. Рус һәм башҡа телдәрҙең төп һүҙлек фонды һәм грамматика төҙөлеше тураһында монографиялар һәм Марр-ҙың марксизмға ҡаршы булған теорияларын бөтә яҡлап тәнҡитләүсе йыйынтыҡтар әҙерләнде һәм бер өлөшө баҫып сығарылды.

Әҙәбиәтте өйрәнеүселәр тарафынан да шундай уҡ яуаплы бурыстар хәл ителә. И. В. Сталиндең тел ғилеме буйынса хеҙмәттәре нигеҙендә әҙәбиәтте өйрәнеү мәсьәләләренә арналған, май айында булып үткән дискуссия художестволы әҙәбиәт әҫәрҙәрен өйрәнеүҙәге етешһеҙлектәрҙе асты. Дискуссия әҙәбиәтте өйрәнеүселәрҙең иғтибарын әҙәбиәттең марксистик-ленинсе теорияһын тәрән эшләүгә, общественный аң формаһы булған әҙәбиәттең үҙенсәлектәрен, яҙыусыларҙың телен һәм стилен, халыҡсанлыҡ һәм художестволы проза һәм поэзия әҫәрҙәренең милли формалары мәсьәләләрен өйрәнеүгә юнәлтергә ярҙам итте.

И. В. Сталиндең хеҙмәттәрендә общество тураһында, базис һәм надстройка мәсьәләләре, халыҡтарҙың формалашыуы тураһында, общество тарихында телдең роле тураһында марксистик-ленинсе фәндең ижади үҫтерелеүе СССР тарихы, Мәскәү тарихы һәм башҡалар буйынса хеҙмәттәрҙә күп кенә мәсьәләләрҙе ҡайтанан ҡарарға һәм яңыса хәл итергә ярҙам итте.

Үткән йыл эсендә физиология өлкәһендә ҙур алға китеү булды. Совет физиологтарының төп көсө юғары нерв эшмәкәрлеге тураһында И. П. Павловтың материалистик учениеһын ижади эшләүгә юнәлтелгән. Павловтың тикшеренеү методтарын медицинаның төрлө өлкәләренә индереү өсөн күп нәмә эшләнде. Фәндәр Академияһы президиумы эргәһендә ойошторолған И. П. Павловтың физиологик учениеһы проблемалары буйынса ғилми совет физиология фәне өлкәһендәге фәнгә ҡаршы булған идеалистик концепцияларҙы тамам бөтөрөүгә булышлыҡ итә.

И. В. Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән хеҙмәтенең донъяға сығыуы беҙҙең физиктарыбыҙҙың, химиктарыбыҙҙың, математиктарыбыҙҙың, астрономдарыбыҙҙың ижади активлеген күтәрҙе.

Ошо йылдың апрелендә космогония мәсьәләләре буйынса киң фәнни дискуссия булып үтте. Һауалағы есемдәрҙең барлыҡҡа килеү һәм үҫеү закондарын билдәләүҙең донъяға материалистик ҡараш өсөн беренсе дәрәжәләге әһәмиәте бар. Империализм илдәрендә фән реакционерҙары космогонияның хәл ителмәгән мәсьәләләрен идеалистик концепцияларҙы һәм дини йолаларҙы таратыу өсөн файҙаланалар. Совет ғалимдары һауалағы есемдәрҙең барлыҡҡа килеү проблемаһын хәл итеү өсөн хәҙерге заман физикаһының, астрономияһының, геологияһының, геофизикаһының һәм геохимияһының бөтә ҡаҙаныштарын ҡулланалар. Космогонияның төп проблемаларын совет фәне генә хәл итә аласағына шик юҡ.

1950 йылда хөкүмәтебеҙ Куйбышев, Сталинград һәм Каховка гидроэлектростанцияларын, Төп Төркмәнстан, Көньяҡ Украина, Төньяҡ Ҡырым һәм Волга-Дон каналдарын төҙөү тураһында тарихи ҡарарҙар ҡабул итте. СССР Фәндәр Академияһы коммунизмдың сталинсе бөйөк төҙөлештәренә ярҙамға булышлыҡ итеү комиссияһы төҙөнө. Илебеҙҙең бөтә ғалимдарының коммунизмдың материаль-техник базаһын булдырыуҙа ҡатнашыуҙары, уларҙың производство работниктәре менән ижади дуҫлығы, совет фәнен үҫтереүҙең мөһим шарты булып тора.

Америка империалистары һәм уларҙың ярҙамсылары яңы бөтә донъя һуғышын тоҡандырған бер ваҡытта, Советтар Союзы — бөтә донъяла тыныслыҡтың терәге — тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе бөйөк планын үтәй.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете пленумы

Икенсе мәсьәлә — ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитеты эше тураһындағы мәсьәлә буйынса доклад менән ҡала комитетенең секретаре иптәш Пацурия сығыш яһаны. Үҙенең докладында ул былай тине:

— Партияның Черниковск ҡала ойошмаһы, партия Үҙәк Комитетенең, Совет хөкүмәтенең ҡарарҙары һәм иптәш Сталиндың күрһәтмәләре нигеҙендә эш итеп, үҙенең тырышлыҡтарын һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡты уңышлы тамамлауға йүнәлтте. Ҡаланың предприятиелары биш йыллыҡ план заданиеларын срогынан алда үтәнеләр.

Ҡала партия ойошмаһы, — тине иптәш Пацурия, — социалистик ярышты ойоштороу мәсьәләләренә күберәк иғтибар бирә башланы. Ярыш барышында производствоның меңәрләгән новаторҙары, стахановсылар үҫеп етеште, уларҙың һаны һуңғы йылда ғына бер ярым тапҡырға артты. Ҡала партия ойошмаһының инициативаһы буйынса 1950 йылда промышленность предприятиеларында һәм төҙөү ойошмаларында алдынғы хеҙмәт методтарын таратыу һәм яңы техниканы үҙләштереү мәсьәләләре буйынса производство-техник конференциялар үткәрелде. Эшселәрҙең һәм инженер-техник работниктарҙың үҫә барған ижади активлеге 1950 йылда ғына 6600 рационализаторлыҡ тәҡдиме индерелеүендә күҙәләнде. Уларҙы ҡулланыуҙан миллионлаған һум государство средстволарына экономия яһалды. Ҡаланың предприятиеларында һәм төҙөлештәрендә коллектив стахановсы эшкә күсеү өсөн социалистик ярыш киңәйә бара. 1950 йылда стахановсы 14 цех бар ине, ә хәҙер улар — 23. Партия ойошмалары тотош предприятиеларҙың коллектив стахановсы эшенә елгәшеү өсөн көрәшәләр.

Промышленность предприятиеларының работниктары алдынғы тәжрибәне дөйөмләштереү һәм массовый таратыу буйынса инженер Ковалев башланғысын актив яҡлайҙар. Был метод буйынса эшләүгә 1900 эшсе өйрәтелде һәм тағы ла 2200 кеше өйрәтелә.

Партия ойошмаһының промышленность мәсьәләләренә иғтибарҙы көсәйтеүе, — тине иптәш Пацурия, — уның эшендәге ҡайһы бер уңыштарҙы ла билдәләне. Валовой продукция эшләп сығарыу буйынса 1950 йыл планы байтаҡ арттырып үтәлде. Ағымдағы йыл программаһы ла уңышлы үтәлә.

1950 йылда промышленность предприятиеларының күбеһе мөһим сифат күрһәткестәрен — продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү заданиеларын үтәнеләр.

Ләкин ҡала партия ойошмаһының промышленносҡа етәкселегендә, — тине иптәш Пацурия, — сериҙ етешһеҙлектәр ҙа бар әле. Ҡала комитете айырым предприятиеларҙың, нефть эшкәртеү заводының артта ҡалыуына юл ҡуйҙы, бөтә предприятие эшенең сифат күрһәткестәрен яҡшыртыуға, эске резервтарҙы максималь файҙаланыуға, производствоның алдынғы методтарын киң таратыуға елгәшә алманы. Ҡала предприятиеларында 1 мең самаһы эшсе нормаларҙы үтәмәй, эшсе кестең килеп-китеп тороуына юл ҡуйыла.

Айырым төҙөлөш ойошмалары ҡәнәғәтләнерлек эшләмәй әле. Айырым төҙөлөш ойошмаларында төҙөлештең индустриаль методтары йомшаҡ индерелә, хужалыҡ иҫәбе бригадалары яҡланылмай, төҙөлештең ҡиммәтләнеүенә юл ҡуйыла. Партияның ҡала комитете һәм партия ойошмалары төҙөлөш ойошмаларының эшенә тәрән инмәйҙәр, алдынғы методтарҙы индереү һәм төҙөлештең сифатын яҡшыртыу өсөн ҡырҡа көрәш алып бармайҙар, ужаһыҙлыҡҡа килешеп ҡарайҙар.

Унан һуң иптәш Пацурия ҡаланы төҙөкләндереү тураһында һөйләне. Һуңғы йылдарҙа йөҙәр меңләгән торлаҡ майҙандары төҙөлгән. Үткән йыл эсендә генә 0 меңдән артыҡ квадрат метр торлаҡ төҙөлгән. Ҡалала яңы мәктәптәр, медицина учреждениелары, балалар баҡсалары һәм яслелары, клубтар төҙөлә, юлдар, тротуарҙар төҙөлә.

Һуңынан иптәш Пацурия партия ойоштороу һәм партия-политик эштең торошона ентекләп туҡталды. Ул партия ойошмаһы составының үҫеүе тураһында әйтте. Ҡалала партияның 186 төп ойошмаһы бар, шуларҙың 72-һе һуңғы үрт йыл эсендә ойошторолған.

Партия ҡала комитете партия ойошмаларына етәкселектә йәнле методтарҙы: партия ойошмаһы секретарҙарының кәңәшмәләре һәм семинарҙарын, уларға тура-туранан, урындарға сығып инструктаж биреүҙе күберәк ҡуллана башланы. Уларҙың докладтары ҡала комитетының бюроһында тыңланыла. Үткән йыл һәм был йыл партия ойошмаһы секретарҙарының 8 кәңәшмәһе һәм 6 тапҡыр семинарҙары үткәрелде.

Шулай ҙа, — тине иптәш Пацурия, — партия эшенең ыңғай тәжрибәһен таратыу ҡәнәғәтләнерлек түгел, «Правда» гәзитәһы быны бик дөрөҫ билдәләне. «Правда»ның мәҡәләһен тикшергәндән һуң ҡала комитеты партия ойошмалары эшенең ыңғай тәжрибәләрен дөйөмләштереү һәм таратыу буйынса конкрет план төҙөне. Был план буйынса аҙ һайлау партия ойошмаларында ойоштороу эшен яҡшыртыу һәм партия-политик эште хужалыҡ эшмәкәрлеге менән ярашҡырып алып барыу тураһында ябыҡ кәңәшмә үткәрелде.

Партияның ҡала комитеты пленумдарҙа, партия активы йыйылыштарын регулярҙар үткәрә. Күп ваҡыт уларҙа партия ойоштороу һәм партия-политик эш мәсьәләләре тикшерелә. Тикшереү өсөн мәсьәләләрҙе әҙерләүгә партия ҡала комитетенең члендары һәм рядовой коммунистар йәлеп ителә.

Партия ҡала комитетенең пленумдары, партия активының йыйылыштары, партияның төп ойошмаларында булып үткән отчет-һайлау йыйылыштары, шулай уҡ ҡала партия ойошмаһының конференцияһы коммунистарҙың активлектарының күтәрелеүен, ҡала партия ойошмаһында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү кимәленең күтәрелеүен күрһәттеләр.

Унан һуң иптәш Пацурия партия ойоштороу эшендәге етешһеҙлектәр тураһында һөйләне. Ҡала комитете үҙ ҡарарҙарының һәм юғары партия органдарының ҡарарҙарының үтәлешен тикшереүҙе ҡәнәғәтләнерлек ҡуя алманы әле. Партияның күп кенә ойошмалары партия поручениеларын үтәү тураһында коммунистарҙың отчеттарын тыңламайҙар һәм шуның менән тапшырылған эш өсөн яуаплылыҡ тойғоһон тәрбиәләмәйҙәр. Ҡайһы бер коммунистар партия поручениеларын формаль генә үтәйҙәр, ә ҡайһы берҙәренең поручениелары бер ҙә юҡ.

Комсомолға етәкселек итеүҙә лә етешһеҙлектәр бар. Күп комсомол ойошмаларында ойоштороу һәм тәрбиә эше ҡәнәғәтләнерлек түгел: членлыҡ взностары буйынса бурыстар бар, комсомол йыйылыштарына һәм политик мәктәп занятиеларына йөрөү түбән, йәштәр өсөн доклад, лекциялар аҙ уҡыла.

Партияның ҡала комитете профсоюздарға етәкселекте яҡшыртты. Ләкин профсоюз ойошмаларының эшендә лә серьез етешһеҙлектәр бар әле. Уларҙың күбеһе профсоюздарҙың X съезы ҡарарын йомшаҡ үтәйҙәр, социалистик ярышҡа ҡәнәғәтләнерлек етәкселек итмәйҙәр.

Партия ҡала комитете тарафынан үткәрелгән бөтә саралар, — тине иптәш Пацурия, — партияның эске эштәрен байтаҡ яҡшыртыуға күп дәрәжәлә ярҙам иттеләр. Партияның төп ойошмалары ойоштороу яғынан нығынылар, яҡшыраҡ эшләй башланылар.

Шуның менән бергә, партияның ҡала комитете партия-политик, идеологик эште күренерлек яҡшыртыуға өлгәште. Ағымдағы йылда коммунистарҙың 98 проценте политик уҡыу менән шөғөлләнә. Ҡалала 30 политик мәктәп, «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса 136 түңәрәк, юғарылатылған типтағы 30 түңәрәк, партияның ике кискә мәктәбе эшләй, 132 коммунист марксизм-ленинизм университетында уҡый.

Кадрҙарҙың экономик уҡыуҙары мөһим урын алып тора. Ҡалала 27 экономик семинар эшләй, уларҙа 640 кеше уҡый. Семинарҙарҙың тыңлаусылары социализм политик экономияһын һәм конкрет экономика мәсьәләләрен өйрәнәләр.

Партия мәғарифенең кимәле пропагандистарҙың теоретик әҙерлегенә бәйле булыуын иҫәпкә алып, партияның ҡала комитете пропагандистар кадрҙарын һайлап алыу һәм әҙерләүгә төп иғтибарҙы юнәлтте. Даими хәрәкәт итеүсе семинарҙар эша, мәктәптәрҙең һәм түңәрәктәрҙең занятиеларында үҙ-ара булыу юлы менән пропагандистарға систематик ярҙам күрһәтелә. Уҡыу йылы башланғандан алып занятиеларҙа бына шулай үҙ-ара булыуҙа 174 пропагандист ҡатнашты.

Партияның ҡала комитете 175 түңәрәк һәм политик мәктәп етәксеһенең эшен тикшерҙе, тикшереү һөҙөмтәләре пропагандистар семинарында ҡаралды. Түңәрәктәрҙең һәм политик мәктәптәрҙең занятиелары йәнле, юғары идея кимәлендә, тыңлаусыларҙың актив ҡатнашлығында үтә.

Ләкин партия мәғарифе селтәренең эшендә, — тине иптәш Пацурия, — серьез етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Айырым коммунистар формаль генә уҡыуға йәлеп ителгән булып иҫәпләнәләр, фактик алғанда уҡымайҙар. Партияның ҡала комитете ҡайһы бер түңәрәктәрҙең программа материалын үтеүҙә артта ҡалыуҙарын булдырмау өсөн кәрәкле сараларҙы күрмәне.

Унан һуң иптәш Пацурия ҡалала лекцион эштең торошо, агитацион-массовый эш тураһында һөйләне. Ҡала партия ойошмаһының агитколлективтарында 4113 агитатор иҫәпләнә. Улар өсөн айына һайын инструктив кәңәшмәләр үткәрелә, бәседәләрҙең тематикаһы тәҡдим ителә. Предприятиеларҙа күргәҙмә агитация байтаҡ яҡшыртылды, ул конкрет һәм максатҡа йүнәлешле булып әүерелде. Ҡаланың етәксе работниктары эшселәр йыйылыштарында политик докладтар менән йышыраҡ сығыш яһай башланылар. Киң йәйелдерелгән массовый-политик эш хужалыҡ һәм политик бурыстарҙы хәл итеүҙә ғалыҡтың активлеген бик ныҡ күтәрҙе.

* * *

Партияның Черниковск ҡала комитетеның эше тураһында ҡушма доклад менән ВКП(б) Өлкә Комитете секретаре иптәш Ҡорбанғолов сығыш яһаны.

Ҡала промышленность предприятиеларының эшендәге уңыштарын билдәләп, иптәш Ҡорбанғолов бөтәһенән дә элек партия ҡала комитетенең промышленноска етәкселегендәге етешһеҙлектәргә туҡталды.

Партияның ҡала комитете предприятиелар эшен тәрән өйрәнмәй, производствоның резервтарын асыҡлау һәм файҙаланыуға тейешле иғтибар бирмәй, мәҫәлән, химия заводында продукцияның айырым төрҙәре буйынса Главканан алынған заданиелар билдәләнгән меҡдарға ҡарағанда байтаҡ түбәндәр. Эшкә ярҙамсы, государствоса ҡарау продукция эшләп сығарыуҙы заводтың ҡеүәтенә ярашлы итеү кәрәклеген күрһәтергә тейеш ине. Ләкин завод етәкселәре быны эшләмәй, булған мөмкинлектәрҙе файҙаланмай.

Былдай файҙаланылмаған мөмкинлектәр ҡаланың башҡа предприятиеларында ла бар.

Ҡала комитетенең бюроһында тикшерелгән мәсьәләләргә анализ яһау, — тине иптәш Ҡорбанғолов, — ҡала комитетенең ҡайһы ваҡыт төҙөлөш һәм промышленность предприятиеларының эске мәсьәләләрен ныҡлы уйлап һәм үҙ ваҡытында ҡуймауын, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен етерлек тиклем тикшереүҙе ойоштормауын күрһәтә. Шуға күрә ҡаланың айырым предприятиеларе булған эске резервтарҙы һәм мөмкинлектәрҙе асыу һәм файҙаланыуға йүнәлтелмәйҙәр.

Ҡала комитетенең промышленноска етәкселектәге серьез хаталары һөҙөмтәһендә ҡаланың иң ҙур предприятиеһе — нефть эшкәртеү заводы 1949 йылдан башлап социалистик ярышта беренселекте юғалтты. «Дубитель», электр лампылары заводтары, Горместпромкомбинат 1950 йыл пландарын һәм ағымдағы йылдың беренсе квартал планын үтәмәнеләр.

Ҡала комитетенең төҙөлөш ойошмаларының эшенә ҫәтән генә, етерлек квалификациялы булмаған мөнәсәбәте, уларҙың ҡайһы берҙәренең үҙ пландарын үтәһәләр ҙә, эштәрҙең, айырыуса торлаҡтар төҙөлөшөнөң юғары сифатлы булыуын тәьмин итә алмауҙарына килтерҙе. Төҙөлөш ойошмаларында эшсе көсө насар файҙаланыла, механизациялаштырыу баһаланмай, һәм күп процестар, айырыуса ер һәм штукатурлау эштәре ҡул көсө менән башҡарыла. Был хеҙмәт етештереүсәнлеген түбәнәйтә, төҙөлештән үҙенә төшөү хаҡын күтәрә, объекттар төҙөүҙе һуҙыуға килтерә.

Партияның ҡала комитете алдынғы хеҙмәт методтарын таратыуға етерлек иғтибар бирмәй. Диченко, Сычев, Зотова иптәштәрҙең һәм башҡаларҙың тәжрибәһе төҙөлөш эшселәре араһында етерлек таратылмаған әле. Ул ғына ла түгел, партияның ҡала конференцияһында билдәләнгәнсә, күп кенә предприятиеларҙа производство новаторҙарының эшенә тейешле шарттар тыуҙырылмай.

Иптәш Ҡорбанғолов, торлаҡ төҙөлөшө һәм эшселәрҙең культура-тормош шарттарын яҡшыртыу тураһында һөйләп, партияның ҡала комитете һәм партия ойошмалары заводтарҙың торлаҡ коммуналь бүлектәренең эшенә, йәшәп килгән торлаҡ фондын ремонтлау, өлгәлә тип йөрөтөлгәндәрен генә түгел, бәлки бөтә дөйөм торлаҡтарҙың эшен яҡшыртыу мәсьәләләренә тейешле контроль булдырмағандар, тип билдәләне.

Ҡала комитете ҡала хеҙмәтсәндәренең торлаҡ көн-күреш шарттарын яҡшыртыу мәсьәләләрен бер нисә тапҡыр тикшергән, ләкин үҙ ҡарарҙарының үтәлешен тикшереүҙе ойоштормаған, хужалыҡ етәкселәренә тейешле талапсанлыҡ күрһәтмәгән.

Ҡала комитетенең промышленноска етәкселектәге етешһеҙлектәре шуның менән аңлатыла: партияның ҡала комитете ҡайһы бер ваҡыт мәсьәләләрҙе партия-политик эштән айырып хәл итә, кадрҙарҙы партия һәм хөкүмәт директиваларын үтәүгә юғары талапсанлыҡ рухында тәрбиәләмәй.

Иптәш Ҡорбанғолов, унан ары, Черниковск ҡала комитетенең партия-ойоштороу эшендәге серьез етешһеҙлектәре тураһында һөйләне. Ҡала комитете хужалыҡ һәм политик мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә партия ойошмаларының ролен күтәреү сараларын күрмәй, ҡала комитетенең бюроһында төп партия ойошмаһы секретарҙарының отчеттары аҙ тыңланыла.

Партия ойошмаһы секретарҙарының семинарҙары квалификациялы үткәрелмәй, күп ваҡыт бүлек мөдирҙәре һәм инструкторҙары тарафынан ғына алып барыла. Ҡала комитетенең секретарҙары семинарҙарҙа һирәк сығыш яһайҙар. Семинарҙарҙа тикшерелгән мәсьәләләр төп партия ойошмаларының тормошо менән йомшаҡ бәйләнгәндәр, семинарҙарҙа алдынғы хеҙмәт методтарын индереүҙә, уйлап табыусылыҡты һәм рационализаторлыҡты үҫтереүҙә партия ойошмаларының ролдәре кеүек мәсьәләләр тикшерелмәй. Семинарҙарҙа партия ойошмалары эшенең ыңғай тәжрибәләрен башҡаларға күсереү ойошторолмаған, ә бындай тәжрибә ҡала партия ойошмаһында бар.

Партияның күп кенә төп ойошмаларының эшендә серьез етешһеҙлектәрҙең береһе шунан тора: улар администрация эшмәкәрлегенә контроль хоҡуҡын тормошҡа ашырмайҙар, хужалыҡ мәсьәләләрен хәл итеүҙе партия-массовый эш менән нығытмайҙар. Иптәш Ҡорбанғолов төҙөлөш тресы партия ойошмаһын миҫалға килтерә. Бында партком секретаре иптәш Новиков производствоның ағымдағы мәсьәләләре менән күп шөғөлләнә, ләкин эшселәрҙең хеҙмәткә аңлы мөнәсәбәттәрен күтәреүгә тейешле иғтибар бирмәй, коммунистарҙың авангарлыҡ ролдәрен күтәрмәй.

Беренсе номерлы ТЭЦ партбюроһының секретаре иптәш Жетишев коммунистарҙы бөтә партия ойошмаһын станцияның эшендәге бракты бөтөрөүгә мобилизовать итеү урынына, бөтә эште үҙе башҡарырға тырыша.

Химия заводының партия ойошмаһы заранаҙаны кәметеү, эшләп сығарылған продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү, иғалтыуҙар, юғарылатылған нормативтар тураһындағы мәсьәләләрҙе бер тапҡыр ҙа тикшермәгән. Эшселәрҙең торлаҡ көн-күреш һәм культура шарттары тураһындағы мәсьәләләр күп кенә партия ойошмаларының контроленән ситтә тороп ҡала.

Ҡала комитетенең төп партия ойошмаларына етәкселектәге йомшаҡ яҡтарының береһе партия активын тәрбиәләү эшенең ҡәнәғәтләнерлек булмауынан тора. Партияның ҡала комитете партияның төп ойошмаларын партия сафын производствоның алдынғы кешеләр иҫәбенән үҫтереү эшен яҡшыртыуға, ВКП(б) членлығына кандидаттар менән эште яҡшыртыуға йүнәлтмәй, йәш коммунистарҙы тәрбиәләү эшен ойоштороуҙа партия ойошмалары секретарҙарына аҙ ярҙам итә.

Унан һуң иптәш Ҡорбанғолов, ҡала комитетенда ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшереү насар ҡуйылған, тип билдәләне. Ҡала комитете эштә өҙөклек булғас ҡына тикшереүҙе ойоштора, шул уҡ ваҡытта тикшереү бик өҫтән генә үткәрелә. Ҡала комитетенең культура көнкүреш һәм коммуналь төҙөлөш мәсьәләләре буйынса күп кенә ҡарарҙары менән эш шулай булды. Ҡала комитете партия ҡарарҙарын үтәү өсөн работниктарҙың ныҡлы яуаплылығын булдырмаған.

Партияның ҡала комитете етәксе кадрҙарҙы һайлап алыу, урынлаштырыу һәм тәрбиәләү буйынса бер ни тиклем эш башҡарған, шулай булһа ла был эштә лә ҙур кәмселектәр бар. Етәксе кадрҙар араһында килеп-китеп тороуҙар ҙур, партия ойошмаһы секретарҙары бик йыш алышына, кадрҙарҙың дөйөм белем кимәлдәрен һәм эш квалификацияларын күтәреү ҡәнәғәтләнерлек түгел. Ҡатынҡыҙҙарҙан етәксе кадрҙарҙы тәрбиәләү һәм үрләтеүгә аҙ иғтибар бирелә.

Массовый-политик эш өлкәһендә ҡала комитете тарафынан ебәрелгән хаталар бик серьезлар, — тине иптәш Ҡорбанғолов. — Ҡала комитете партияның төп ойошмаларынан агитацион-массовый эшкә етәкселек итеүҙе ныҡлап талап итмәй, шуға күрә уларҙың ҡайһы берҙәре уның торошо өсөн яуаплылыҡ тоймайҙар. Киске һәм төнгө сменаларҙа кешеләр менән бер нindәй ҙә эш алып барылмауы ҡаланың бөтә предприятиеларе өсөн характерле булып тора.

Партияның ҡала комитете һәм партияның төп ойошмалары башҡорт һәм татар телдәрендә агитацион-массовый эш алып барыуҙы әле булһа баһаламайҙар, ә предприятие эшселәре, айырыуса төҙөлөш ойошмалары эшселәре араһында башҡорт һәм татарҙар күп.

Халыҡтың торған урынында массовый-политик эш йомшартылған. Ул дөйөм торлаҡтарҙа айырыуса насар алып барыла.

Ҡала комитетенең бурысы, — тине иптәш Ҡорбанғолов һүҙен йомғаҡлап, — яҡын ваҡыт эсендә эштәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙән, хужалыҡ һәм культура төҙөлешенә етәкселек кимәлен күтәреүҙән, эштең торошон ныҡлап өйрәнеүҙән, кешеләр менән күберәк эшләүҙән, масса менән бәйләнеште күберәк нығытыуҙан һәм шул нигеҙҙә партия һәм хөкүмәттең заданиеларын үтәүҙе тәьмин итеүҙән тора.

ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитете секретаре иптәш **Корольков** ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитете секретаренең докладлы буйынса үҙенең сығышында бораулауҙа, нефть сығарыуҙа һәм төҙөлештә алдынғы совет техникаһын индереү буйынса ҡала партия ойошмаһының эше тураһында һөйләне. Ҡала комитете бюроһы, тине ул, нефть менән бәйләнгән мәсьәләләрҙе: пластка һыу индереү, бораулау режиме һәм уны тиҙләтеү, яңы техниканы индереү тураһындағы мәсьәләләрҙе регуляр тикшерә. Яңы техниканы, хеҙмәттең алдынғы методтарын индереү мәсьәләләре буйынса ҡалала систематик рәүештә техник конференциялар, семинарҙар үткәрелә. Хәҙер Октябрьскийға пластка һыу индереү, парафинға ҡаршы комплексле көрәш, тиҙләтелгән режимдарҙа бораулау тәжрибәһен һәм методын өйрәнеү өсөн илебеҙҙең башҡа республикаларынан һәм өлкәләренән күренекле совет специалистары, ғилми работниктар, инженерҙар, мастерҙар килә.

Нефть предприятиеларының партия ойошмалары экономика мәсьәләләре менән тәрәнерәк ҡыҙыҡһына башланылар. 1-се номерлы промыселдың партия ойошмаһы йыйылыштарында рационализация, уйлап табыу мәсьәләләре һәм хужалыҡ иҫәбе тураһындағы мәсьәләләр систематик тикшерелеп тора. Администрацияның хужалыҡ эшмәкәрлегенә партия контроле һиҙелерлек яҡшырҙы, һөҙөмтәлә етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бөтөрөргә мөмкинлек тыуҙы. Был промысел «Икенсе Баку» районында алдынғы промысел булып тора.

Шул уҡ ваҡытта,— тине иптәш Корольков, — ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитетенең промышленноска етәкселек итеүендә ҙур һәм серьез етешһеҙлектәр бар. Беҙ күп кенә предприятиеларҙа инженер Ковалев методын киң ҡулланыуға өлгәшмәгәнбеҙ әле. Техник информация йомшаҡ ҡуйылған, һөҙөмтәлә күп кенә ҡиммәтле тәҡдимдәр предприятиеларға билдәһеҙ ҡалалар. Ҡала комитете техник информацияны яҡшыртыу өсөн саралар күрә. Хәҙер һис кисектермәйенсә нефтселәрҙең өлкә-ара кәңәшмәһен саҡырырға кәрәк. Быны шуға күрә эшләргә кәрәк, сөнки конструкторҙар-машина төҙөүселәр әле булһа нефть районларының специфик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмайҙар. Конференция техник прогрестың һәм алдынғы техниканы индереүҙең артабанғы юлдарын табырға ярҙам итәсәк. Октябрьскийҙың ҡала партия ойошмаһы нефть промышленносында һәм төҙөлештә техник яңылыҡтарҙы индереүгә һәм дөрөҫ файҙаланыуға, хеҙмәттең стахановсы методтарын таратыуға өлгәшеү өсөн ныҡышмалы көрәшәсәк. Нефтселәр иптәш Сталинға яҙған хатта алынған социалистик йөкләмәләрҙе срогынан алда үтәү өсөн бөтә көстәрен һалалар.

Үҙенең һүҙен тамамлап, ул, иптәш Пацурияның докладында үҙ-үҙеңде тәнҡитләү булманы, тине. Тәнҡиткә иғтибарға алмаған етәкселәр докладта тәнҡитләнмәнеләр. Иптәш Ҡорбанғоловтың өҫтәмә докладынан күренгәнсә, бындай етәкселәр Черниковск ҡалаһында бар. Докладта техник-экономик күрһәткестәрҙе үтәү буйынса бер генә предприятиеға ла анализ яһалманы, коммунистарҙың авангардлыҡ роле күрһәтелмәне.

— Иптәш Ҡорбанғоловтың ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитетына ҡарата яһаған тәнҡит иҫкәрмәләре дөрөҫ,—тине пленумда сығыш яһаусы Өфө нефть эшкәртеү заводының директоры иптәш **Минасян**. — Был иҫкәрмәләр ҡала комитете работниктарына генә, уның секретаре иптәш Пацурияға ғына түгел, бәлки предприятиеларҙың партия һәм хужалыҡ работниктарына лә ҡайтып ҡала. Ни өсөн ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитетенең эшендә билдәле өлгәшеүҙәр менән бер рәттән ҙур етешһеҙлектәр ҙә бар һуң? Сөнки беҙ үҙ эшебеҙҙе тәнҡит күҙлегенән ҡарап баһаламай, етешһеҙлектәрҙе күрмәй башланыҡ.

Иптәш Минасян ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитете секретаре иптәш Пацурия бер нисә етәксе работник менән бөтә эште эшләргә ынтылып, ҡала комитете бүлек мөдирҙәренең һәм инструкторҙарының эш өсөн яуаплылығын күтәрергә тырышмай, тине. Ҡала комитете аппаратының роле түбәнәйтелгән. ВКП(б) ҡала комитете аппаратының эшен шулай итеп ойошторорға кәрәк: бүлек мөдирҙәре һәм инструкторҙар инициативаны күберәк күрһәтһендәр, теге йәки был участкала эштең торошо өсөн даими тынысһыҙланыу һәм яуаплылыҡ тойһондар.

ВЛКСМ Өлкә Комитетенең секретаре иптәш **Саяпов** фекер алышыуҙа сығыш яһап, комсомол ойошмаларына партия етәкселеге тураһындағы мәсьәләгә туҡталды.

— ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитете һәм партияның төп ойошмалары, тине ул, комсомол эшенә етәкселек итеүҙәрен бер ни тиклем яҡшырттылар. Һөҙөмтәлә йәштәрҙең хеҙмәт активлеге күтәрелде. Социалистик ярышта 30 мең йәш эшсе ҡатнаша, 350 комсомолец-йәштәр бригадаларына отлично сифат бригадаһы тигән почетлы исем бирелде. Йәштәрҙең ВЛКСМ сафтарына инеүе артты, политик-тәрбиә һәм культура эше бер ни тиклем яҡшырҙы.

Ләкин ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитетында һәм ҡаланың күп кенә партия ойошмаларында, — тип билдәләне иптәш Саяпов, — йәштәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү эшендә серьез етешһеҙлектәр бар әле. Улар промышленностың йәштәр менән даими тулыландырылыуын йыш ҡына иғтибарға алып еткермәйҙәр. Күп кенә предприятиеларҙа эшләүселәрҙең дөйөм һанының 50-70 процентен йәштәр тәшкил итәләр. Ҡалала комсомол эшенә, йәштәрҙе тәрбиәләүгә арналған партия йыйылыштары һәм пленумдар байтаҡ үткәрелә, ләкин уларҙың ҡарарҙары тиҙ онотола. Иң яҡшы комсомол ойошмаларының эше популярлаштырылмай. Бына шуға күрә лә йәштәрҙе тәрбиәләү Черниковск ҡала партия ойошмаһында әле булһа айырыуса артта ҡалған участка булып тора. Комсомолдың ҡала һәм Өлкә Комитеттары мөрәжәғәт иткән мәсьәләләргә партияның Черниковск ҡала комитете һәм иптәш Пацурия иғтибарһыҙ ҡарай, тип әйтергә лә алмайбыҙ. Ләкин ВКП(б) ҡала комитетенең һәм иптәш Пацурияның етешһеҙлеге партияның төп ойошмалары секретарҙарын һәм хужалыҡ етәкселәрен комсомолға, йәштәргә иғтибарлы мөнәсәбәт итеүгә өйрәтмәүҙәренән тора. Йәштәр өсөн көн-күреш шарттарын булдырыу тураһында хәстәрлек күрмәгән етәкселәргә тейешле талапсанлыҡ ҡуйылмай.

Унан ары иптәш Саяпов культура-массовый эшкә серьез иғтибар кәрәклеге тураһында һөйләй. Черниковскиҙа бер генә культура дворецы ла, ҙур клуб та, стадион да юҡ. Уларҙы төҙөү өсөн заводтарға һәм башҡа предприятиеларға бирелгән средстволар йылдар буйына үҙләштерелмәйҙәр.

Унан һуң фекер алышыуҙарҙа партияның Ишембай ҡала комитете секретаре иптәш **Якимов** сығыш яһаны. Ишембай ҡалаһы промышленность предприятиеларының эше тураһында һөйләп, иптәш Якимов, Черниковск ҡалаһының ҡайһы бер промышленность предприятиелары насар эшләмәгән булһа, нефть, газ сығарыуҙа һәм нефть эшкәртеүҙә Ишембай промышленность предприятиеларының күрһәткестәре байтаҡ юғары булыр ине, тине. Иптәш Пацурия үҙ докладында Черниковскиҙың был промышленность предприятиеларының эшен тәнҡитләмәне.

Билдәле булыуынса, тине иптәш Якимов, нефть сығарыуҙы күтәреү эшендә скважиналарҙы кислота менән эшкәртеү хәл иткес әһәмиәткә эйә. Ишембай нефтселәре химия заводын күптән бирле тәнҡитләйҙәр, ләкин хужалыҡ етәкселеге лә, партияның ҡала комитете лә Ишембай предприятиеларын кислота менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыу буйынса ҡырҡа саралар күрмәнеләр. Электр лампылары заводы насар продукция етештерә. Завод адресына тәнҡит һүҙҙәре бик күп әйтелә, ләкин лампылар сифатының яҡшырыуы һиҙелмәй. Партияның Черниковск ҡала комитетына завод маркаһының сифаты өсөн көрәш тураһындағы мәсьәләне бөтә үткерлеге менән ҡуйырға кәрәк ине.

Иптәш Якимов Ишембайҙа нефть тотҡостарҙы төҙөү эшен насар алып барыусы «Башнефтестрой» тресының етәкселеген тәнҡитләй. Нефть тотҡостары йылдар буйына төҙөләләр һәм түбән сифатлы булалар, күп кенә объекттар тамамланмаған әле. Черниковскиҙа төҙөлөш планын трест арттырып үтәйҙе, Ишембайҙағы төҙөлөшкә ул ҡамһетең ҡарай. Трест етәксеһе иптәш Старикоттың Ишембайҙа булғаны юҡ.

Черниковск ҡала комитете, тине иптәш Якимов, промышленноска етәкселек итеү мәсьәләләренә иғтибарҙы йомшартты, партия-политик эште хужалыҡ бурыстарын хәл итеү менән бәйләп алып барыуҙы тормошҡа дөрөҫ ашырмай.

Партия ҡала комитете кадрҙарҙы үҫтереү һәм тәрбиәләү буйынса эште йомшаҡ алып бара. Һуңғы ос йыл эсендә Черниковск ҡала комитетына партия эшенә тик Ишембай партия ойошмаһынан ғына биш кеше алынды. Был, партия ҡала комитетенең кадрҙарҙы үҫтереү өҫтөндә эшләргә теләмәгәнлеген күрһәтә.

Черниковск партия ойошмаһында тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү кимәле ярыраҡ булһа һәм ул партия ойошмаһына ҡуйылған талаптарға тулыһынса яуап бирһә, эштә етешһеҙлектәр аҙыраҡ булыр ине, тине иптәш Якимов. Партия ҡала комитете һәм бөтәһенән элек иптәш Пацурия үҙе тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе йәйелдереү өсөн шарттар тыуҙырыу сараларын күрмәй.

Һүҙен тамамлап, иптәш Якимов, партия Өлкә Комитете һәм уның тармаҡтағы бүлектәре партияның Черниковск ҡала комитете эшенә талапсанлыҡ менән ҡарамайҙар, уның эшендәге хаталарҙы үҙ ваҡытында төҙәтмәнеләр, тине.

Һүҙ Башпрофсовет председателе иптәш **Улингә** бирелә.

— Совет профсоюздары, — тине ул,— ғәйәт ҙур массовый ойошма ул. Большевиктар партияһының етәкселегендә ул хеҙмәтсәндәрҙе тәрбиәләү буйынса ҙур эш алып бара, коммунизм төҙөүҙә актив ҡатнаша. Черниковскиҙа, мәҫәлән, 60 меңдән артығыраҡ профсоюз членын берләштергән 150-нән ашыуыраҡ фабрика-завод һәм урындағы комитет бар. Бындай ҙур ойошма уға дөрөҫ етәкселек итмәйенсә бик күп нәмәне эшләй ала. Ләкин хәҙер уның эшмәкәрлегендә күп кенә серьез етешһеҙлектәр бар. Эшселәрҙе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе тәрбиәләүҙең мөһим формаһы—дөйөм йыйылыштарҙы баһалап еткермәүҙән бөтә профсоюз ойошмаларына дөйөм етешһеҙлек булып тора. Байтаҡ урындарҙа, бында дөйөм йыйылыштар тик юбилей көндәрендә генә үткәрелә, ә көн үҙәгендә торған мәсьәләләр бик һирәк тикшерелә. Бындай хәл эшселәрҙе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләп сығыу яһау йәки тәҡдимдәр тикшерә индереү мөмкинлегенән мәхрүм итә. Производство кәңәшмәләре менән дә ошондай уҡ хәл. Өфө нефть эшкәртеү заводында массовый эшкә иғтибарҙы йомшартыу ярышта формализм элементтарын барлыҡҡа килеүенә килтерҙе. Ярышҡа йомғаҡ яһау киң массаларҙың ҡатнашлығынан һәм тикшереүенән башҡа үткәрелә.

ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитеты профсоюздарға иғтибарҙы күберәк бирһә был етешһеҙлектәр булмаҫ та ине. Ләкин шуны билдәләргә кәрәк, завкомдарҙың һәм месткомдарҙың эшмәкәрлегенә ҡайһы партия етәкселегенең кәрәклеген баһалап еткермәү ВКП(б) ҡала комитетенең эшендә серьез етешһеҙлектәрҙең береһе булып тора. ВКП(б) ҡала комитете профсоюз ойошмаларының эше менән бәйләнгән мәсьәләләрҙе һирәк тикшерә. Ул профсоюз ойошмаларының эшмәкәрлегенә етәкселек итеү тураһында партияның төп ойошмаһы секретарҙарының бер генә отчетын да тыңламаны. ВКП(б) ҡала комитете профсоюз ойошмаһын баһалап еткермәй, һис шикһеҙ, уның эшенә йоғонто яһай. Партия ҡала комитетенә профсоюз ойошмаларының ролен күтәреүгә һәм производство пландарын үтәү, техник-экономик күрһәткестәрҙе яҡшыртыу өсөн ярышта уларҙың актив ҡатнашыуына өлгәшергә кәрәк.

Партияның Черниковск ҡала комитетенең эше тураһындағы доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа, шулай уҡ, Черниковск ҡала Советы исполкомы председателе иптәш **Попков**, «Башнефтестрой» тресының управляющийы иптәш **Стариков**, ВКП(б) Өлкә Комитетенең нефть промышленносы бүлеге мөдире иптәш **Бикбов**, БАССР Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары иптәш **Кошелев**, партияның Стәрлетамаҡ ҡала комитете секретаре иптәш **Миниахов** сығыш яһаны.

Фекер алышыуҙың аҙағында ВКП(б) Өлкә Комитете секретаре иптәш **Ваһапов** сығыш яһаны. Ыңғай яҡтарын һәм ҡайһы бер уңыштарын билдәләп, ул партияның Черниковск ҡала комитетенең эшендәге етешһеҙлектәрҙе һәм партия-ойоштороу һәм партия-политик эште көсәйтеү, тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе йәйелдереү һәм шул нигеҙҙә партия ойошмаһының бөтә етәкселек эшмәкәрлегенең кимәлен күтәреү буйынса партия ойошмаһының бурыстарына ентекле рәүештә туҡталды.

МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ

Общественный малсылыҡты үҫтереү өсөн көрәштә ыңғай аҙым

Зианчура районының колхозсылары, малсылыҡ работниктары һәм специалистары продукт биреүсе общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ һәм малсылыҡты үҫтереүҙең ике йыллыҡ планын срогынан алда үтәү өсөн 1951 йылдың башында конкрет йөкләмәләр алып, республикабыҙҙың бөтә малсылыҡ работниктарын социалистик ярышҡа саҡырҙылар. Ярыш инициаторҙарының үҙ эштәрендә айырылмаһы, 1951 йылдың 1 кварталында общественный малсылыҡты үҫтереү буйынса республикабыҙҙың райондары араһында барған социалистик ярышта Зианчура районы еңеп сыҡты, һәм уға Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды. Шулай уҡ был район йылҡысылыҡты үҫтереүҙең ике йыллыҡ планын срогынан алда — 8 майға 101 процентҡа үтәүгә өлгәште.

Район колхоздарының общественный малсылығын алға ебәреү өсөн көрәштә «Коммунизм өсөн» газетаһы (ВКП(б)-ның Зианчура район комитеты органы) ҙур ғына роль уйнай. Ул үҙ биттәрендә колхоздарҙа общественный малсылыҡтың үҫешен системалы яҡтыртып барып, был мөһим мәсьәләне уңышлы хәл итеүҙә районның партия һәм совет ойошмаларына ярҙам күрһәтә.

[illegible]

«Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа малдарҙы уңышлы ҡышлатайыҡ!», «Малсылыҡ продукттарын тапшырыу уңышлы бара», «Малсылыҡты үҫтереү планын арттырып үтәү өсөн!» тигән материалдар биреләр. Газета үҙ биттәрендә был эште әүҙем ойоштороусы колхоз председателдәре, ферма работниктарының һәм специалистарының сығыштарын биреп бара. Унда «Большевик» колхозының председателе М. Туймаҡаев, «Инәк» совхозының һыйыр һауыусыһы Сәғитова, Буденный исемендәге колхоздың ферма мөдире М. Баҫҡаҡов, йылҡы ҡарауысыһы Мадиков, район ауыл хужалығы бүлегенең баш зоотехнигы С. Юлашев һәм башҡа иптәштәр сығыш яһап, үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар.

«Заветы Ильича» колхозының алдынғы һыйыр һауыусыһы иптәш А. Иванова үҙенең сығышында былай тип яҙа:

«...Мин үҙем тәрбиәләгән һыйырҙарҙы ваҡытында, дөрөҫ ашатыуҙы, эсереүҙе һәм даими күҙәтеп барыуҙы тәьмин итәм. Шуның арҡаһында һыйырҙарҙың һөт биреүе йылдан-йыл арта бара».

Газетала сығыш яһаусы башҡа авторҙар ҙа малсылыҡ проблемаһын уңышлы хәл итеү буйынса ярышып эшләүҙең ыңғай һөҙөмтәләр биреүе тураһында һөйләйҙәр һәм эште тағы ла яҡшыртыуға ҡарата ҡиммәтле тәҡдимдәр индерәләр.

«Коммунизм өсөн» газетаһының ыңғай яғы тағы ла шунда, ул үҙ биттәрендә малсылыҡ работниктары ярышын регуляр яҡтырта, пландарын арттырып үтәү арҡаһында хеҙмәт көндәренә күп кенә өҫтәмә хаҡ алыусы малсылыҡ алдынғы- [illegible]

[illegible] уның төҙөмөн яҡшыртыу өсөн ныҡлы көрәш ойоштороусы айырым колхоздарҙың, фермаларҙың тәжрибәләрен даими күрһәтә барырға, бер үк ваҡытта был эште баһаламаусыларҙы, кемдең-кем булыуына ҡарамаҫтан, ҡаты тәнҡитләргә кәрәк.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Алдынғы тәжрибәләрҙе киң пропагандаларға"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 89-сы номерында «Коммунизмға» газетаһының (Ҡыйғы районы) алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалауға иғтибар бирмәүе тураһында матбуғат күҙәтеү баҫылғайны. Ошо әйтелгәндә ВКП(б)-ның Ҡыйғы район комитеты түбәндәге ҡарарҙы алды:

«Алдынғы тәжрибәләрҙе киң пропагандаларға» тигән матбуғат күҙәтеү ВКП(б) район комитетының бюро ултырышында тикшерелеп, унда күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ҡарата конкрет саралар билдәләнде. Бюро редактор иптәш Вәлиевтә район газетаһының эшен яҡшыртыуға, эрелетелгән колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яҡтан нығытыу мәсьәләһен киң яҡтыртырға, «Алдынғылар трибунаһы» тигән рубрика менән районың алдынғы колхоздарын, тракторсыларын, комбайнерҙарын һәм малсылыҡ работниктарын күрһәтә барырға мәжбүр итергә, 1951 йылдың 15 июнендә ауыл хәбәрселәренең һәм стена газеталары редакторҙарының кәңәшмәһен үткәрергә, тигән ҡарар ҡабул итте».

В. Г. БЕЛИНСКИЙ

(Тыуыуына 140 йыл тулыуға ҡарата)

Виссарион Григорьевич Белинский тыуғанға 140 йыл ваҡыт үтте. Иптәш Сталин уны бөйөк рус милләтенең ғорурлығы булып торған кешеләр — халҡыбыҙҙың иң яҡшы улдары менән бер рәткә ҡуйҙы. Белинский беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙең бурыстарын үҙ замандаштарының бөтәһенән дә тәрәнерәк аңланы, ул уны үҙ заманындағы рус тормошо талаптарынан сығып аңланы. 30-сы һәм 40-сы йылдарҙағы деятелдәрҙән бер кем дә үҙ халҡы менән уның кеүек ныҡ бәйләнмәгәйне. Белинский ҡарашының тәрәнлеге быға ошо бәйләнеш менән аңлатыла. Был ҡараш беҙҙең көндәрҙә иптәш Ждановтың «Искусство үҙен халыҡ яҙмышынан айырып ҡуя алмай» тигән һүҙҙәрендә әйтеп бирелде.

Үҙенең бөтә талантын ошо идеяны тормошҡа ашырыуға бағышлап, Белинский Россияла әҙәбиәттең башҡа бер ниҙә лә булмағанса прогрессив общественный көс булып әүерелеүенә бик ныҡ ярҙам итте.

Белинскийҙең ҙур тарихи масштабтағы деятель булыу ролен тулы билдәләп В. И. Ленин: «Беҙҙең азатлыҡ хәрәкәтендә разночинецтар тарафынан дворяндарҙы тулыһынса ҡыҫырыҡлап сығарыуҙың иң әлекке кеше крепостной право ваҡытында уҡ В. Г. Белинский булды» тип яҙҙы.

Белинский был хәрәкәттең ике этабы араһында тора, ләкин ысын гениаль кеше булғанлыҡтан, ул алыҫ киләсәккә ҡарай белде. Белинскийҙең Гогольгә яҙған, крепостной крәҫтиәндәрҙең настроениеһын сағылдырған данлыҡлы хатын В. И. Ленин «цензураһыҙ демократик матбуғатта иң яҡшы әҫәрҙәрҙең береһе» тип юҡҡа ғына атаманы. Үҙ халҡының ижади көстәренә тәрән ышаныу, уға ҡарата бөйөк мөхәббәт Белинскийҙе һәр ваҡыт рухландыра. Тәнҡитсе тарафынан яҙылған һәр бер юл быны ошолар менән һуғарылған.

Белинскийҙән башлап йәшәп килгән бөйөк патриотик традиция милләтселеккә лә, космополитизмға лә ят. Ул, бөтәһенән дә элек, **революцион-демократик** булып тора, шуға күрә лә Белинскийҙең Ватанға мөхәббәте ни тиклем дәртле һәм тәрән булыуына ҡарамаҫтан, һәр төрлө мистик хыялдарға ят ине. Был мөхәббәт рус халҡының асыҡ фекерен сағылдыра. Халыҡ «милли тормош утын үҙендә һаҡлай» тип күрһәтте тәнҡитсе. Рус милли характеренең иң яҡшы яҡтарын Белинский гениаль рәүештә хеҙмәтсәндәр ҡатламында күрә.

Белинский космополиттарҙы ғәйепләп бик тапҡыр рәүештә «кешелек донъяһындағы паспортһыҙ бераҙаҡтар» тип атаны. Космополитизмға ул рухани сәләмәт кешенең ниндәйҙер тәбиғи булмаған кәмселеккә йәки рухани боҙоҡлоҡҡа ҡараған кеүек нәфрәт менән ҡараны.

Белинскийҙең космополитизмде дошман күреүендә үҙ халҡының хеҙмәтсән ҡатламдары менән уның яҡын бәйләнеше, шулай уҡ буржуаз Европаға һәм Америкаға ҡарата нәфрәте лә кәүҙәләнә.

Белинскийҙең буржуаз обществоға тапҡыр баһа биреүе ул сит илдәрҙә йөрөп ҡайтҡас бигерәк ныҡыны һәм тәрәнәйҙе. «...Капиталистар ҡулындағы булған государство — хәсрәт, ул кешеләрҙә, патриотизм тойғоларында бер ниндәй күтәренкелек юҡ. Улар өсөн һуғыш йәки тынысылыҡ үҙ фондтарының күтәрелеүе йәки түбән төшөүе генә тигән һүҙ—шунан арыу улар бер нәмә лә күрмәйҙәр».

Был һүҙҙәр Франция буржуазияһы тураһында яҙылғандар. Белинскийҙең нәфрәт менән яҙылған был һүҙҙәрен бынан һуң үткән тотош быуаттағы бөтә политик практика дөрөҫләне. Уның хөкөм ҡарары Францияны Америка Ҡушма Штаттарына һатыусы һәм үҙ илене хыянәт итеүсе, «ике йөҙ семья»ның хәҙерге әҙләнеүҙәренә тулыһынса тура килә.

Белинскийҙең революцион-демократик патриотизмы, милләтселеккә һәм космополитизмға, көнбайыштағы буржуаз стройға дошман ҡарауы, — былар бөтәһе лә Белинскийҙең ғөмүмән рус культураһы деятеле булыуы, бигерәк тә әҙәби тәнҡитсе булыуы сифатында үтәгән бөйөк тарихи бурысы менән тәрән бәйләнгән.

Белинский әҙәбиәттең обществолағы түбән ҡатлам кешеләрен, уларҙың интерестарын, уларҙың кешелек сифаттарын ҡаршынан сығып һүрәтләү хоҡуғын ныҡ яҡланы.

Белинскийҙең рус әҙәбиәтен рухландырған принциптары — әҙәбиәттең реализмы, идеялылығы һәм халыҡсанлығы ине. — «Поэзия барыһын да элек, тормош, унан һуң ғына искусство», — тип әйтте Белинский, «тормош» тигән һүҙҙән ул общественный интерестарҙы һәм художниктең ойлигән тыуҙыра торған бөтә нәмәне аңланы. Бөйөк тәнҡитсенең был фекере ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булды. Уның ыңғай тәьҫире аҫтында рус әҙәбиәте эстетизмлыҡ юлы менән барыусы дворяндарҙың «искусство — искусство өсөн» тигән зарарлы девизен ваҫкен рәүештә кире ҡаҡты.

Бөйөк тәнҡитсе бик ныҡ көрәшеп килгән нәмә — әҙәбиәттең халыҡсанлығы, уны демократиялаштырыу — Белинский үлгәндән һуң быуаттың икенсе яртыһында йәшәгән ҙур рус яҙыусыларының Тургеневтан алып Некрасовҡа һәм Щедринға тиклем бөтәһенең дә юнәлеш биреүсе лозунгыһы булып тора.

Белинскийҙә эстетик идеяларының килеп сыға торған ҡарашы — искусствоға матурлыҡ сығанағы булған тормоштоң үҙендәге ғәрәплек еңелгәндән һуң ғына ысынлап таптана итер тигән был ҡараш рус әҙәбиәтендә ныҡ тамыр йәйә. Тормоштағы матурлыҡ китаптағы матурлыҡтан өҫтөн тора.

Белинский тарафынан барлыҡҡа килтерелгән был үсешно икенсе быуат йәшәп килә ине. Был — искусствоның ысынбарлыҡ менән, эпоханың алдынғы идеялары менән бәйләнешен өҙөргә теләүселәргә ҡаршы ысын-ысындан «күптәнге, ләкин дәһшәтле ҡорал» булып тора. Ватаныбыҙҙың бөтә донъя күләмендә әһәмиәте туҡтауһыҙ үҫә барған, уның социалистик культураһы киң тарала барған һайын Белинский идеялары беҙҙең илебеҙҙән тыштағы демократик уҡыусыларҙы тәрбиәләп һәм ағартып, ысын-ысындан бөтә донъя күләмендәге әһәмиәткә эйә була барҙы. Белинский идеялары йәшәүенең икенсе йөҙ йыллығы әлекке йөҙ йыллыҡҡа ҡарағанда ла данлыраҡ булыр.

А. Лаврецкий,
филология фәндәре докторы.

Яраҡһыҙ етәкселек һөҙөмтәләре

Өфө «Башстрой» тресы икенсе йыл тәрән әҙерлекһеҙ эшләй. Ул 1950 йылда государство планын иң барыһы 75,3 процентҡа, ә 1951 йылдың беренсе квартал планын 73,6 процентҡа үтәне. Шулай уҡ трест төҙөлөштән урена ташау хаҡы планын да үтәмәне. Накоплениеләр алыу урынына ул зарарға эшләй. 1950 йылда һәм 1951 йылдың 1 кварталында трест государствоға 100-әр меңләгән һум зарар килтерҙе.

Трестә төҙөлөш эштәренең былай әҙерлекле булыуын ниндәй сәбәптәр менән аңлатырға мөмкин һуң? Быны аңлатыу өсөн ҡайһы бер сәбәптәрҙе әйтеп үтеү урынлы булыр.

Пландың үтәлмәүенә, бөтәһенән элек, трестың төҙөлөш эштәренә иғәклы әҙерләнмәүе төп сәбәп булып тора. Трест цементтан башҡа төп төҙөлөш материалдары әҙерләмәне. Оҙаҡ ваҡыттар буйы буш тороуҙар, эшсе көстәрен объекттан-объектҡа йыш ҡына күсереү, уларҙы үҙҙәренең квалификациялары буйынса файҙаланмау — бөтәһе лә трестың 1950 йылда ла һәм быйылғы үткән 5 айҙа ла эш графигын өҙөүгә, хеҙмәт етештереүсәнлегенең түбән булыуына килтерҙе. Тик быйыл май айында ғына иптәш Романенконың 7 кешенән торған ташсылар бригадаһы һәм иптәш Трифонов етәкселек иткән 11 кеше составындағы бригада кирбес булмау сәбәпле буш торҙолар. Улар объекттан-объектҡа бер нисә тапҡыр күсерелеп йөрөтөләләр. Иптәш Киселёв етәкселек иткән малярҙар бригадаһы буяу булмау сәбәпле бер эштән икенсе эшкә күсерелеп йөрөтөлдө. Былай хәлдә трестә йыш ҡына осратырға мөмкин.

Төҙөлөш эштәрен механизациялаштырыу трестә айырыуса насар хәлдә тора. Механизация бөтөнләй юҡ, тип уйлау ҙур хата булыр. Ул етерлек. Ләкин трест етәкселәренең үҙ эштәренә яуаплыһыҙ ҡарауҙары һөҙөмтәһендә, трестә булған механизмдарҙың яртыһы производствола файҙаланылмай. Штукатурка эштәре барыһы 12-15 процентҡа, маляр эштәре 40 процентҡа ғына механизациялаштырылған. Ә штукатурка агрегаттарының иҫәүһе оҙаҡ ваҡыттар буйына эшләтелмәйҙәр. Ер эштәре ҡул көсө ярҙамында башҡарыла. Грунт ҡаҙылған ваҡытта транспорттар ҡулланылмайҙар. 1950 йылдың IV кварталында трест ҡеүәтле башня краны алғайны. Ләкин, уны алғас, ярты йыл ваҡыт үтте. Кран ошо көнгә тиклем һаман «монтажлана» ғына әле. Ә эшселәр, элеккеге кеүек, йорттоң икенсе һәм өсөнсө ҡаттарына кирбесте носилка менән ташыйҙар.

Төҙөлөш эштәренең өҙөлөүендә төп сәбәптәрҙең береһе — ул төҙөлөш материалдарын үҙ ваҡытында килтереп еткермәү. Трестың автотранспорты тулыһынса файҙаланылмай. Автопарктың тик 35-40 проценте генә төҙөлөш эшендә ҡатнаша. Ә ҡалған автомашиналар капиталь һәм ағымдағы ремонт көтәләр.

Объекттарҙа төҙөлөш эштәре ағас, кирбес, металл балкалар менән тәьмин итеүҙә әҙерлек булыуға ҡарамаҫтан, трест етәкселәре уларҙы үҙ көстәре менән әҙерләү һәм ташыу сараһын күрмәйҙәр. 1950 йылда трест 3 мең кубометр ағас әҙерләргә тейеш ине. Ә ул бөтәһе 1466 кубометр ғына әҙерләне. Һал менән 470 кубометр ағас ағыҙылды. Уның да 270 кубометры юлда юғалды. Ләкин был юғалтыуҙарға ғәйепле кешеләр яуапҡа тартылмайҙар. 1951 йылда трест үҙ көсө менән бөтәһе 4 мең кубометр ағас әҙерләргә тейеш. Быйыл 5 ай ярым үтте. Бер кубометр ағас та әле әҙерләнмәгән. Ағас әҙерләү планын үтәүҙе трест управляющийы иптәш Конкин кәрәкле һанамай. Уны, подрядчиктарҙың төҙөлөш материалдарына мохтаждығы, тип уйларға мөмкин. Былай ыңғайыс, үҙенән-үҙе билдәле, пландың өҙөлөүгә генә килтерәсәк, һәм был шулай ҙа. Сонки быйыл апрель айында планлаштырылған бик күп төҙөлөш объекттарының яртыһы ла үтәлеп еткерелмәне. Апрелдә бөтәһе төҙөлөш күләме 395 мең һумлыҡ планлаштырылһа, ул, фактик алғанда, ни бары 195 мең һумлыҡ ҡына үтәлде. Ә трест апрель айы планын 101,5 процент итеп күрһәтә. Трест управляющийы иптәш Конкин планды үтәүҙең яңы «юлын» тапҡан: ҡаланың планда күрһәтелгән культура-тормош һәм торлаҡ объекттарын төҙөү урынына трест планда булмаған осраҡлы заказчиктарҙың объекттарын төҙөй.

График буйынса үтәлгән эштәрҙең иҫәбен алып барыуҙың ҡәнәғәтләнерлекһеҙ хәлдә тороуы менән бер рәттән, төҙөлөш материалдары расходтарын оформить итеү системаһы ла насар хәлдә тора. Улар бик абай оформить итәләр, һөҙөмтәлә төҙөлөш материалдарын әрәм-шәрәм итеүгә, туҙҙырыуға юл ҡуйылған. Трест етәкселәре объекттарҙа ниндәй материалдың күпме расходланғанын һәм норма буйынса күпме расходланырға тейешлеген белмәйҙәр. Былай «иҫәп» алып барыу [illegible] хаҡын күтәрә генә. 1950 йылда ғына был линия буйынса государствоға 582 мең һум яһалған зарар трест өсөн осраҡлы хәл түгел.

Трест управляющийы иптәш Конкиндең үҙ бурысына ғәмһеҙ ҡарауы һөҙөмтәһендә, государство милкен туҙҙырыусылар яуапҡа тартылмағандар. 1950 йылда гражданин Каширан 47 мең һумлыҡ ағас материалдарын туҙҙырһа ла, ләкин ошо көнгә тиклем ул яуапҡа тартылмаған. Быны иптәш Конкин, күрәһең, бик нормаль хәл, тип иҫәпләй. Ҡала һәм район партия конференцияһында яраҡһыҙ етәкселек иткән өсөн иптәш Конкин һәм трестың башҡа етәксе работниктары бик ҡаты тәнҡитләнгәйнеләр. Ләкин улар хәҙергә тиклем үҙ эштәрендә һығымта яһамайҙар һәм трестың әҙерлектән сығарыу өсөн практик сара күрмәйҙәр.

Р. Вәлиев,
ВКП(б)-ның Ленин район комитетының промышленность бүлеге мөдире.

Яңы китаптар

Башҡортостан Государство издательствоһы һуңғы көндәрҙә башҡорт телендә түбәндәге китаптарҙы баҫып сығарып, китап магазиндарына тапшырҙы:

И. И. Соколов, «Физика курсы» урта мәктәп өсөн дәреслек, беренсе киҫәк, механика, урта мәктәптең 8-се класы өсөн дәреслек, тәржемәсеһе Х. Ҡәҙермәт һәм У. Мәмлеев, тәржемәнең редакторы Ш. Чураев, күләме 196 бит, тиражы 2000 дана, хаҡы 3 һум 90 тин.

А. В. Перышкин, Г. И. Фалеев һәм В. В. Крауклис, «Физика» икенсе киҫәк, ете йыллыҡ һәм урта мәктәптең 7-се класы өсөн дәреслек, тәржемәселәре Х. Ҡәҙермәт һәм Х. Мохтар, тәржемәнең редакторы Ш. Чураев, күләме 224 бит, тиражы 5000 дана, хаҡы 2 һум 60 тин.

Ф. В. Шалаев һәм Н. А. Рыков, «Зоология», урта мәктәптең 6-7 кластары өсөн дәреслек, тәржемәселәре Ғ. Ишбулат, М. Сәғдиева, Ә. Помаруҙин, Ә. Бузатова, Х. Ҡәҙермәт, Н. Уразметов, Х. Мохтар, тәржемәнең редакторы Х. Ҡәҙермәт, күләме 302 бит, тиражы 15 мең дана, хаҡы 4 һум.

Н. К. Дмитриев, профессор, педагогика фәндәре Академияһының действительный члены, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденты, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған ғалимы, **«Башҡорт теленең грамматикаһы»,** редакторҙары Т. Әхмәров һәм Ғә. Кейекбаев, күләме 299 бит, тиражы 5000 дана, хаҡы 10 һум.

Колхоз баҡсаһында

I

[illegible] колхоздың емеш-еләк баҡсаһы [illegible]

[illegible]

— Бына [illegible] был «Красный штандарт» тигән Мичурин сортлы алма ағасы. Беҙ уларҙы 1936 йылда ултыртҡан инек, — ти.

Тәбиғәтте үҙ ҡулы менән төҙәүсе бөйөк Мичуриндың был сорты баҡсаһында сыҙамлылығы һәм матурлығы менән баҡсала айырым урын алып тора. Уның япрағы ла, япрағының һабаҡтары ла ҡыҙғылт төҫтәләр, ә бешеп еткәс алманың эсе ҡарбуз кеүек ҡып-ҡыҙыл була.

Былардан ситтәрәк, баҡсаның иң юғары өлөшөндә, айырым рәт булып теҙелгән алма ағастарына күрһәтеп, Нурлығаянов иптәш тағы ла күтәренкелек менән һүҙ башланы.

— Был Мичурин бабайҙың иң маҡтаулы «600 грамлы» антоновкаһы. Мичурин бер үк тәбиғәт шарттары эсендә ни тиклем ҙур контраслы үҫемлектәр етештергән! «Антоновка» иһә «Красный штандарт» сортына ҡапма-ҡаршы сорт. Уның ботаҡтары көслө, япраҡтары ике тапҡырға ҙурыраҡ, алмаһы балауыҙ төҫендә булып бешә һәм һәр алмаһының ҙурлығы 600 грамға етә.

«Антоновка» эргәһендәге «Таежное» тигән сорт алма ағасын, бәлки, беҙ күңелгә лә алмаған булыр инек. Ул ҡарағат кеүек тапалаҡ ҡыуаҡ рәүешендә үҫә. Ләкин иптәш Нурлығаянов уңҡалау йөҙө менән беҙгә ҡарашы ла еңелдән тотоп, ул бәләкәй ҡыуаҡ янында туҡтатты.

Мичурин емеш-еләк баҡсасылығын илебеҙҙең таныҡ һәм кәнсылыҡ өлкәләренә киң йәйеп ебәреү проблемаһы өҫтөндә ҙур эш алып барҙы һәм был өлкәлә беҙгә бай мирас ҡалдырҙы. Бына был «Таежное» тигән сорт алма ағасы ана шул мирастың иң ... ролен уйнаны. Сонки ул ҡатта 45—50 градус һалҡынды ла бирешмәй. Алыҫ Тайгала хәҙер киләсәктәге коммунизм баҡсаларының нигеҙен һалды, ундағы халыҡҡа баҡсалар үҫтереүҙең мөмкинлеген асып бирҙе.

Груша. Ул элекке заманда тик Ағиҙел буйында йәшәүсе халыҡтарҙың әкиәттәрендәге хыялды байыҡтырыр өсөн генә ҡулланылып һөйләнгән һүҙ. Ә хәҙер совет агробиология фәненең, колхоз тәжрибәсенең көсө менән ул хыялдан ысын барлыҡҡа күсте, әкиәттәрҙән тормошҡа инде. Беҙҙең алда груша ағасы. Дөрөҫ, ул әле емеш бирмәй. Ләкин уның тупраҡты соҡоп алған тәрән тамырҙары, мәрйән кеүек һары ҡабыҡлы көслө ботаҡтары инде быға ныҡ хужа булып алғандар. Был «Бере зимняя Мичурина» тигән сортлы грушаның киләсәктә беҙҙең Башҡортостанда ябай емешкә әйләнәсәгенә беҙ һис тә шик тотмайбыҙ.

II.

Был, 18 гектар майҙанды биләп торған баҡсала тағы ла сейә, ҡарағат, ҡурай еләге, крыжовник кеүек емештәр ҙә үҫәләр. Баҡсаның урта бер урынында урман кеүек ҡуйырып торған йәрәғай алма ағастары әкрен ғына иҫкән елдәр менән тирбәлеп беҙҙе ҡаршыланылар. Колхоз председателе иптәш Юнусов ул ағастарҙың береһенә сыбыртҡы һабы менән шаҡып:

— Таҙа үҫәләр, — тине һәм үҙенең алдағы пландарын һөйләне.

Һуғыш алды йылдарында был урында ҙур питомник булған. Хәҙер шунан үҫеп йәрәғай алма ағастары орлоҡ участкаһына әйләндергәндәр. Бына бәрәләнгән алмалар. Уларҙың һәр береһе 4 кенә алма теше бирһәләр ҙә, колхоз үҙенең орлоҡ участкаһынан йөҙ меңләгән һанда яңы алма ағастары үҫтерерлек орлоҡ әҙерләй аласаҡ. И. В. Мичурин, һәр районың тәбиғи шарттарына ҡарата, урында етештерелгән орлоҡтар сәсеп кенә, ултыртыу материалдарын шул уҡ шарттарҙа үҫтереүгә айырыуса ҙур иғтибар итте. Мичуринсы иптәш Нурлығаянов бөйөк ғалимдең кәңәштәрен хәҙер уңышлы рәүештә тормошҡа ашыра.

Ҡурай еләге кеүек ваҡ ғына йәш алма ағастары ултыртылған питомникка инеүгә, Юнусов һәм Нурлығаянов иптәштәр ерҙә әйелеп, иғтибар менән нәмәләр ҡарай башланылар. Был ағастарға уҙған йылды ялғау уҙғарылған, ә хәҙер көсләй күҙәнәктәрҙән йәш кенә ағастар ҡалҡып сыҡҡандар. Иптәш Нурлығаянов шул ағастың береһен иркәләп үҫемә ҡуйҙы ла:

— Бынан көҙгә был беҙҙең орлоҡ алма ағасы буласаҡ. Был бәләкәй участканан беҙ меңдән артыҡ «Красный штандарт», «Башкирская красавица», «Антоновка» кеүек сорттарҙы үҫтереп, баҡсабыҙҙы тағы ла киңәйтәсәкбеҙ, — тине.

Мичуринсының был һүҙе колхоз председателенә оҡшаны булһа кәрәк. Ул ҡулы менән алыҫҡа күрһәтеп:

— Ана күрәһеңме, беҙҙең колхоздың ҙурлығын. Хәҙер яйлап өс ауыл ҡушылғас, беҙгә ул ауылдарҙы баҡсалар менән ҡаплап алыр өсөн былай алма ағастарын кәмендә 20 мең тап үҫтерергә кәрәк, — тине.

Был бик төрөс иҫкәртеү. Сонки колхоздың общественный баҡсаһын киңәйтеү менән бер үк ваҡытта, һәр колхозсының усадьбаһында емеш баҡсалары булдырыу — ул нәүбәттәге бурыстарҙың береһе булып тора.

III.

Һуңғы 12-13 йыл эсендә колхоздың алма баҡсаһы өҫтөнән ике тапҡыр көслө һалҡын уҙҙы. Юғарыла әйткәнебеҙсә, 1939—1940 йылдарҙың ғәҙәттән тыш ҡаты һалҡындары уға ҙур зарар һалды. Мичуринсы иптәш Нурлығаянов ана шул йылдарҙың ауыр ҡалдығын бөтөрөү өҫтөндә эш башлағас ҡына, Ватан һуғышы башланды. Ул һөйөклө илебеҙҙе дошмандан һаҡларға фронтҡа китә. Һуғыш йылдарында баҡсаға иғтибар кәмене. Һөҙөмтәлә уның элекке матурлығы тамам юғалды. Дөрөҫ, һуңғы 3-4 йылда баҡсаны торғоҙоу буйынса инде күп эш башҡарылған. Ләкин әле алда эшләргә тейешле эштәр ҙә аҙ түгел. Баҡсаның бер яғында ихатаһы әллә ҡайсан бөтмәгән, айырым алма ағастары артыҡ ҡуйырып киткәндәр, уларҙың кәрәкмәгән ботаҡтарын ҙур оҫталыҡ менән ҡырҡып ташларға, ҡороған алма ағастары урынына яңыларҙы ултыртырға кәрәк.

Сейә участкаһында сасҡаларҙы һирәкләндереүҙе яҡшыртыу өсөн өҫтәмә итеп икенсе төрлө сорт сейә ағастары ултыртыу, тупрағына әҙбиҙ таратыу, питомникте киңәйтеп ебәреү, баҡсаны ҡый үләндәренән тамам таҙартыу кеүек бурыстар торалар. Колхоздың баҡсасылары хәҙер ана шул бурыстарҙы үтәү өҫтөндә эшләйҙәр.

Иптәш Нурлығаянов бер үк ваҡытта, колхоздың умартасылығын, йәшелсәселек эштәре менән дә етәкселек итә. Был ҡатмарлы эштә ул үҙенә инде оҫта ярҙамсылар ҙа әҙерләгән. Зәңгәр кофточка кейгән, аҡ яулығын артҡа тартып бәйләгән, бер йәш ҡыҙҙы саҡырып, мичуринсы беҙҙе уның менән таныштырҙы:

— Иптәш Хафизова Фатима. Фатима минең уң ҡулым булып үҫәй, — ти ул.

Фатима биш йылдан бирле баҡсала звеновод ролен әҙләнһеҙ үтәп бара. Ул үҙенең эшен ярата һәм ҙур оҫталыҡ менән ойоштора. Был баҡсаның меңәрләгән ағастары уның оҫта ҡулы менән инде яңы көс алғандар, юғалған матурлыҡтарын ҡайтарғандар.

Был ҡара күҙле сибәр ҡыҙға ҡарағас, беҙҙең күңелдәр алыҫ Волга буйҙарына киттеләр, унда Фатима кеүек меңәрләгән йәш ҡыҙҙар, Нурлығаянов кеүек алтын ҡуллы иҫәр коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрендә шулай уҡ ҙур дәрт менән арымай-талмай эшләйҙәр. Был баҡсанан ана шул алыҫ Волга буйына тиклем ен кеүек һуҙылып, бер үк эш барып тота. Уның исеме — тәбиғәтте үҙгәртеп төҙөү.

Әйе! Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә беҙҙең халҡыбыҙ тыныс төҙөлөш һәм матур тормош төҙөүҙе ҙур еңеүҙәр менән алып бара. Гигант төҙөлөштә күтәрелгән һәр бер ташҡа баҫҡан, мичуринсыларҙың ҡулы менән үҫтерелгән һәр бер алма ағасы тыныслыҡты боҙорға маташыусы империалистарҙың башына көсле бомба булып төшә.

А. Әхмәров,
Дүртөйлө районы Буденный исемендәге колхоз.

Республика колхоздарында пар һөрөү барышы

(План үтәлеше 1951 йылдың 10 июненә, процентта)

Тотҡан урыны	Райондар	Пар һөрелгән	Тотҡан урыны	Райондар	Пар һөрелгән	Тотҡан урыны	Райондар	Пар һөрелгән
1	Туймазы	101	22	Стәрлетамаҡ	75	43	Ҡырмыҫҡалы	63
2	Өфө	100	23	Бәләбәй	74	44	Покровка	60
3	Яңауыл	98	24	Иглин	72	45	Бишбүләк	60
4	Шишмә	92	25	Күгәрсен	72	46	Борай	58
5	Благовещен	90	26	Благовар	70	47	Белоҡатай	55
6	Маҡар	87	27	Ҡыйғы	70	48	Воскресен	55
7	Ҡандра	87	28	Нуриман	70	49	Ғафури	55
8	Шаран	86	29	Бөҙәйәз	70	50	Мәләүез	54
9	Дүртөйлө	86	30	Илеш	70	51	Стәрлебаш	54
10	Баймаҡ	85	31	Әбйәлил	70	52	Ҡариҙел	53
11	Йомағужа	83	32	Асҡын	69	53	Салауат	52
12	Бүҙәк	82	33	Балтач	68	54	Мишкә	52
13	Дәүләкән	82	34	Дыуан	68	55	Кушнаренко	52
14	Байҡыбаш	81	35	Әлшәй	66	56	Мәсетле	50
15	Ҡалтасы	81	36	Кейекргәзе	65	57	Архангель	50
16	Оло Теләк	80	37	Федоровка	65	58	Әбйәлил	48
17	Йәрмәкәй	80	38	Мишкә	64	59	Матрай	45
18	Бөрө	79	39	Сәкмәгош	64	60	Зилачура	41
19	Тәтешле	77	40	Белорет	63	61	Учалы	37
20	Краснокам	77	41	Хәйбулла	63	62	Бәрйән	17
21	Баҡалы	76	42	Ауырғазы	63	63	Йылайыр	11
						64	Октябрьский	58

• • •

Пар һөрөүҙең иң яҡшы агротехник сроктары үтеүгә ҡарамаҫтан, республикабыҙ колхоздарында был эштең барышы һис ҡәнәғәтләнерлек түгел. Июндең тәүге биш көнлегендә тик Туймазы районы һәм был биш көнлегендә Өфө районы ғына пар һөрөү планын үтәне.

Күпселек райондар, МТС-тар пар һөрөүҙә графикте үтәмәйҙәр. Һуңғы биш көнлектә Шишмә һәм Яңауыл райондары 17—25 процент үҫеш бирҙеләр. Ә Ғафури һәм Йылайыр райондары был биш көнлектә бер төрлө лә үҫеш бирмәнеләр. Пар һөрөүҙең темпы шулай уҡ Әбйәлил, Стәрлебаш һәм башҡа бик күп райондарҙа ла бик түбән. Күпселек МТС-тар пар һөрөүҙә тракторҙарҙың ике сменала эшләүҙәрен ойоштормайҙар.

Бурыс—пар һөрөүҙе яҡын көндәрҙә тамамлауҙан һәм пар ерҙәрен эшкәртеүҙе йәйелдереп ебәреүҙән тора. Бының өсөн хәҙер МТС-тарҙың тракторҙары һәм колхоздарҙың йәнле тартыу көстәре пар һөрөүгә туплапырға тейеш. Трактористарҙың һәм һабансыларҙың көндәлек һәм смена нормаларын үтәүен һәм арттырып үтәүен тәьмин итергә кәрәк.

Парҙы һөрөүҙә хәҙер иң мөһиме — темп һәм сифат. Был ике талап ныҡ һаҡланырға һәм намыҫ менән үтәлергә тейеш.

Йөкләмәмде намыҫ менән үтәрмен

Былтыр мин «Сталинец» комбайны менән 700 гектар майҙандың урожайын йыйнаным. Ә быйыл шул уҡ комбайн менән 800 гектар майҙандың урожайын яҡшы сифатлы итеп йыйнарға һүҙ бирәм.

Мин быйыл Баймаҡ районының Молотов исемендәге колхозында эшләйәсәкмен. Урожай йыйнауҙа быйыл хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн ҙур мөмкинлектәр бар. Уларҙы мин тулыһынса файҙаланасаҡмын.

Комбайным урып-йыйнауға тулыһынса әҙер тора. Ремонт яҡшы итеп үткәрелде. Ремонт ваҡытында машинаның күп кенә иҫке частәре яңылары менән алмаштырылды. Былай яҡшы машинаның тулы нагрузка менән эшләүенә мин яҡшы ышанам.

Мин быйыл йөкләмәмде арттырып үтәрмен.

Ф. Фәизов,

Сибай МТС-ының комбайнеры.

Малсылыҡ алдынғыларында

Шаран районы «Сәп» колхозының ферма работниктәре малсылыҡты үҫтереү һәм уның продуктивлеген күтәреү буйынса уңышлы эшләйҙәр.

Быйыл малдарҙы көтөүҙә йөрөтөү эше яҡшы ойошторолдо. Был, һыйырҙан һөт һауып алыуҙы байтаҡ арттырҙы. Иптәш Вазифа Сәетгәрәева 12 һыйырҙың һәр береһенән хәҙер көн һайын 11—16-шар литр һөт һауып ала. Ул һыйырҙарҙы көнөнә өс тапҡыр һауа. Сания Шакирова, Шәмсиә Мөхәмәдиева иптәштәр быйыл 5 ай ваҡыт эсендә һәр бер һыйырҙан уртаса 700-әр литр һөт һауып алыуға өлгәштеләр. Колхоз государствоға һөт тапшырыуҙың 5 айлыҡ планын 110 процентҡа үтәне.

Колхозда мал аҙығы базаһы булдырыла. Мал аҙығы өсөн үҫтерелгән 325 гектар күп йыллыҡ һәм 65 гектар бер йыллыҡ үләндәр, 22 гектар сөгәлдер, 64 гектар картоф, 24 гектар силос культуралары сәсеүлектәре тәрбиәләнә.

Колхоз хәҙер бөлөнлөктәрҙә бесән сабыуға ентекле әҙерләнә.

И. Фәтхетдинов.

Балалар өсөн яңы китап

Күптән түгел Башгосиздат башҡорт халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн яҙылған «Һунарсы ҡарт» тигән әкиәтен баҫып сығарҙы.

Китап яҡшы аҡ ҡағыҙҙа, күләме 8 бит, һүрәттәр менән матур итеп оформить ителгән, тиражы 4000 дана, хаҡы 50 тин.

Р. Ғәбәйдуллин.



Республика радио клубында йәштәр радио техникаһына өйрәнәләр. Йәш радиотехник Ю. Саркисов радио күргәҙмәлә ҡатнашып, унда үҙенең экспонатын күрһәтте. Ул беренсе дәрәжәләге дипломды алды.

Һүрәттә: Ю. Саркисов радио клубта. А. Червинский фотоһы.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосаларына—өлгөлө тәрбиә

Быйыл яҙ колхоздарҙа баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын ултыртыу ыңғай шарттарҙа үткәрелде. Хәҙер бурыс йәш ағастарҙы яҡшы тәрбиәләүҙән тора.

Тәрбиәләү эшен яҡшы ойоштормаған колхоздар баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын үҫтереүҙә уңышлы эшләйҙәр. Дүртөйлө районы Карл Маркс исемендәге колхозда иптәш Сафиуллин етәкселек иткән звено 27 гектар майҙанда урман полосаһы һәм 2 гектар майҙанда ағас үҫтереү питомнигы тәрбиәләй. Был звено быйыл яҙ 16 гектар майҙанда ағас ултыртыуҙы иртә сроктарҙа, 20—25 апрелдә үткәрҙе. Ул шулай уҡ ағастарҙы тәрбиәләү эшен дә иртә яҙ менән үк башланы. Ағастар араһында һәм уларҙың рәттәре араһында тупраҡ йомшартылды.

Иптәш Сафиуллин звеноһының составы даими. Шуға күрә звенолағы колхозсылар эште яҡшы итеп, оҫта башҡаралар. Бында һәр бер колхозсыға тәрбиәләү өсөн айырым участкалар бүлеп бирелгән, эйәһеҙлеккә юл ҡуйылмай. Тәрбиәләүҙең яҡшы булыуы арҡаһында ағастар яҡшы үҫәләр. 1949 һәм 1950 йылдарҙа ултыртылған ағастарҙың үҫешләнеүҙәре 97 процент тәшкил итә. Уларҙың оҙонлоҡтары хәҙер 1,5 метрҙан артты.

Благовар районы «Ҡыҙыл маяҡ» колхозында иптәш Вахитов звеноһы тәрбиәләгән 18 гектар майҙандағы ағастар 97 процентҡа, Шишмә районы «Түңәрәк» колхозында иптәш Вәли Халиҡов звеноһы тәрбиәләгән 22 гектар майҙандағы ағастар 92 процентҡа үҫешләнде. Республикала был эштә ҙур уңыштар бар.

Ләкин күп кенә колхоздарҙа ағас үҫтереү тәрбиәләүгә тейешле иғтибар бирелмәй, был эштә хаталарға юл ҡуйыла. Ошондай сәбәптәр арҡаһында Баймаҡ районының бик күп колхозында 1949 һәм 1950 йылдарҙа ултыртылған ағастар ҡороған. «Яңы юл» колхозында 1949 йылда ултыртылған 1,6 гектар, Сталин исемендәге колхозда 1949 йылда ултыртылған 0,71 гектар майҙандағы ағастар тулыһынса юҡҡа сыҡтылар. «Красный партизан» һәм «Түңәк» колхоздарында ла шулай уҡ. Был колхоздарҙа ағас үҫтереү өсөн булдырылған звенолар таралғандар. Урман полосалары тәрбиәләнмәй. Был эштә колхоз етәкселәре генә түгел, был колхоздарҙы хеҙмәтләндереүсе Баймаҡ һәм Сибай МТС-тары ла ғәйеплеләр. Сөнки улар урман полосаларының рәт араларында тупраҡты культивациялау буйынса договор йөкләмәләрен үтәмәйҙәр.

Күгәрсен районында үткәрелгән тикшереүҙәр ҙә был эштә ҙур етешһеҙлектәр булыуын күрһәтте. Мраҡ МТС-ы урман полосаларын тәрбиәләү буйынса колхоздар менән төҙәшкән договорҙы үтәмәй.

Бөтә был фактар баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын яҡшы һаҡлау һәм тәрбиәләп үҫтереү өсөн яуаплылыҡты күтәреүҙе талап итәләр.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын тәрбиәләүҙә түбәндәгеләргә айырыуса ныҡ иғтибар бирергә кәрәк. Ағас үҫтереүсе звенолар составы нығытылырға, унда ағымсылыҡҡа юл ҡуйылмаҫҡа тейеш. МТС-тар һәм ЛЗС-тар баҫыу һаҡлаусы урман полосаларында рәт араларын эшкәртеү өсөн тракторҙар бүлергә һәм культивациялауҙы ойоштороға бурыслылар. Колхоз правлениелары ағас үҫтереүсе звеноларға өҫтәмә кешеләр бүлергә, кәрәкле күләмдә ат һәм инвентарҙар бирергә тейештәр.

Баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын тәрбиәләүҙә кисектерергә ярамай. Һуңғы көндәрҙә булған ямғырҙар йәш ағастарға үҫеү өсөн ыңғай шарттар тыуҙырҙы. Шуның менән бергә ҡый үләндәре лә көслө булып үҫтеләр. Уларға ҡаршы көрәш ойоштороға тейеш.

Быҡаса үҫеп килгән ағастар йәй буйына 1 — 2 тапҡыр, 1948 йылдың көҙөндә һәм 1949 йылдың яҙында ултыртылғандары 3 — 4 тапҡыр, 1949 йылдың көҙөндә һәм 1950 йылдың яҙында ултыртылғандары 5 тапҡыр һәм 1950 йылдың көҙөндә һәм 1951 йылдың яҙында ултыртылған ағастар йәй буйына 5—6 тапҡыр тәрбиәләнергә тейештәр. Ағастар үҫә торған майҙанда тупраҡ йәй буйына таҙа, йомшаҡ хәлдә тоторға тейеш. Беҙҙең Башҡортостан шарттарында тәрбиәләү сроктары түбәндәгесә була: беренсе тапҡыр тәрбиәләү май айында тамамлана. Икенсе тапҡыр тәрбиәләү июндең тәүге яртыһында, өсөнсөһө—июлдең беренсе яртыһында, дүртенсеһе—июлдең икенсе яртыһында, бишенсеһе һәм алтынсы тапҡыр тәрбиәләү август айында үткәрелә. Сентябрҙә рәт араларындағы тупраҡты тәрән итеп йомшарталар. Был, тупраҡта артабан дым туплау өсөн үткәрелә.

Бөтә ошо талаптарҙы теүәл үтәү баҫыу һаҡлаусы урман полосаларының яҡшы үҫеүҙәрен тәьмин итәсәк.

Агроном Я. Соколов.

Чехословакияла И. В. Сталин монументен тантаналы асыу

КОМАРОВ, (Прага янында), 10 июнь. (ТАСС). 10 июнда Комаров ҡалаһында И. В. Сталин монументен тантаналы асыу булды.

Ҡала майҙанында эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр, Чехословакия йәштәре һәм пионерҙар ... йыйылды. Монументте асыуға арналған митинг Чехословакия-Совет дуҫлығының тулҡынландырғыс манифестацияһына әүерелде.

Митинг ... Йон митингыла ҙур телмәр менән сығыш яһаны.

— Чехословакия халҡы өсөн, — тине ул, — бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең гениаль юлбашсыһы, уҡытыусыһы һәм дуҫы Иосиф Виссарионович Сталин исеменән дә ҡәҙерлерәк исем юҡ. Чехословакия халҡы өсөн бәхеткә һәм сәскә атыуға «Советтар Союзы менән — мәңгегә бергә» тигән һүҙҙәр менән көсәйтелгән юлдан башҡа дәрәсерәк юл юҡ.

Йон, монументте асыу менән Чехословакия халҡы бөтә донъяла тыныслыҡтың бөйөк байраҡсыһы, туған Сталингә үҙенең иҫһеҙ-сикһеҙ мәхәббәтен, ... һәм рәхмәт тойғоларын ... Советтар Союзы халҡтарына ... ығытың ... күрһәтә, тине.

Йон телмәре Советтар Союзы һәм ... Сталин хөрмәтенә көслө овация... ҡотлау таулыштары менән күп тапҡыр бүленде.

Тантаналы ваҡыт килеп етте. ... монумент ... И. В. Сталин ... килеп баҫа. Ҡул сабыуҙар яңы ... яңыра, артиллерия салюты ... яңырай, оркестр тантаналы марш ...

Митингтә предприятие колектив... ... йыйылған һәм ... районда ... тантаналы ...

Унан һуң монумент ҡуйылған ... ҙанға И. В. Сталин исемен бирер ... һында район милли комитетенең ... иғлан ителде.

Тыныслыкты яҡлаусыларҙың дөйөм Англия конференцияһында

ЛОНДОН, 10 июнь. (ТАСС). Тыныслыкты яҡлаусыларҙың 9 июнда асылған дөйөм Англия конференцияһында профессор Жолио-Кюриға, Изабелла Блюмға, Эми Сяоға һәм Сергей Герасимовҡа Англияға инеү өсөн визалар биреүҙән Англия хөкүмәтенең баш тартыуына ҡаршы протест резолюцияһы ҡабул ителде. Был аҙым резолюцияла «ирекле хәрәкәт итеүҙең һәм һүҙ иркенең бөтә традицияларын боҙоу итеп, тыныслыҡ һәм үҙ-ара аңлашыу эшенә зарар килтереүсе» аҙым итеп ғәйепләнә. Шул уҡ ваҡытта резолюцияла, был, «тыныслыкты яҡлаусылар хәрәкәтенең ғәйәт ҙур һәм үҫә барған ҡеүәтен тейешле власттарҙың асыҡ таныуы» булып тора, тип билдәләнелә.

Тыныслыктың Бөтә Донъя Советы члены Айвор Монтегю Тыныслыктың Бөтә Донъя Советынан конференцияға ҡотлау тапшырҙы.

Унан һуң председателлек итеүсе Д. Н. Притт фекер алышыуҙарҙың башланыуы тураһында иғлан итте.

Фекер алышыуҙарҙа делегаттар, биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыктың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалары йыйнау Англияла тыныслыкты яҡлаусылар хәрәкәтенең беренсе ... жәлеге бурысы булып тора, тип ... һәттеләр. Күп кенә делегаттар Англия ҡалаларында һәм ауылдарында ... ғалар йыйнауҙың барышы тура... конференцияға хәбәр иттеләр. Күп ... делегаттар, тыныслыкты теләү тура... ғына һөйләү етмәй инде, хәҙер ты... лыкты яҡлау өсөн ҡырҡа көрәш ... барырға ваҡыт килеп етте, тип ... ләнеләр.

Үҙ сығыштарында конференция ... легаттары Англия хөкүмәтенең хәрби... лектәрен тамғаланылар, был ... эшселәр синыфы хәленең насарайы... билдәләнеләр, һуғыш пропаганда... көсәйә барыуына ҡаршы көрәш ал... рыу кәрәклеге тураһында һөйләнел...

Конференцияның беренсе көнө ... фессор Берналдың ҡыҫҡаса телмәре ... тамамланды.

Конференция тыныслыкты яҡлау... Кейптаун советынан, тыныслыкты яҡ... ҙың Испания комитетынан, тыныслыкты яҡлаусыларҙың бөтә Индия комитет... Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар кенен байра... буйынса Милли комитеттан, тыныслыкты яҡлауҙың Австралия советынан һәм ... ҡа күп кенә ойошмаларҙан ҡотлау... алды.

Тыныслыҡ Пакты өсөн!

Марсель хеҙмәтсәндәренең 40 мең ҡултамғаһы

ПАРИЖ, 11 июнь. (ТАСС). «Юманите» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Парижға Марсель халҡының делегацияһы килгән. Ул Тыныслыктың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә был департамент хеҙмәтсәндәренең 40 мең ҡултамғаһы ҡуйылған бланкалар һәм биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөүҙе талап итеүсе халыҡ йыйылыштарында ҡабул ителгән резолюциялар килтергән.

Был резолюцияларҙы делегация АҠШ, Великобритания һәм СССР-ҙың Париж... посольстволарына, шулай уҡ Франция министрҙар советы председателенә тапшырырға тейеш ине. Ләкин Америка посолы ла, Англия посолы ла, Франция министрҙар советы председателе лә делегация членадарын ҡабул итмәгәнләр. Тик Совет посольствоһында ғына улар яҡшы ҡабул ителделәр һәм посольство вәкиле делегацияны халыҡтың Совет хөкүмәтенә ... сәгенә ышандырҙы.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 11 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 11 июнда, Корея Халыҡ армияһының частәре, Ҡытай добровольцтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәттә, Америка-Англия интервенттары ғәскәрҙәренең һәм лисынманеы ғәскәрҙәренең атакаларын уңышлы кире ҡаҡтылар һәм дошмандың йәнле көсенә һәм техникаһына ҙур юғалтыуҙар килтерәләр, тип хәбәр итте.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

БАЛАЛАРҘЫҢ УТ МЕНӘН ШАЯРЫУЫНАН ЯНҒЫНДЫҢ БУЛЫУЫНА ЮЛ ҠУЙМАҒЫҘ!

Янғын барлыҡҡа килеүҙә балаларҙың ут менән шаярыуы ҙур сәбәп булып тора.

Йыш ҡына янғындар ҡараусыһыҙ ҡалдырылған балаларҙың ут менән шаярыуынан барлыҡҡа килә. Ҡайһы бер ваҡытта бындай янғындар балаларҙың һәләк булыуы менән тамамлана.

Балалар уйнаған ваҡытта ололар эшләгән нәмәне эшләргә яраталар: шырпы табып, костер яндыралар, тәмәке тарталар, примустар, кәрәсинкәләр тоҡандыралар. Һөҙөмтәлә янғын сығыуға балалар сәбәпсе булалар. Йыш ҡына балалар мейестәр яғылған, примустар, кәрәсинкәләр йәки кәрәсин лампалары тоҡандырылған биналарҙа ҡараусыһыҙ ҡалдырылалар, был шулай уҡ янғындың барлыҡҡа килеүенә килтерә.

Беҙҙең илебеҙҙә балаларҙың ойошҡан һәм культуралы ял итеүҙәре өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған. Балаларҙың ут менән шаярыуҙарына һәм уйнауҙарына юл ҡуймаҫ өсөн бөтә сараларҙы күрергә кәрәк. Бының менән күңелһеҙ ваҡиғаларҙың булыу мөмкинлеге иҫкәртеләсәк.

Шырпыларҙы, зажигалкаларҙы, тәмәкене, папиростарҙы балалар ала алмаҫлыҡ урындарға ҡуйырға кәрәк. Мейес яғған, примус, кәрәсинкә, кәрәсин лампаһы тоҡандырылған биналарҙа балаларҙы бер үҙҙәрен генә бер ваҡытта ла ҡалдырырға ярамай.

Балаларға ут менән уйнауҙы ҡырҡа тыйырға кәрәк. Балаларҙың тәмәке тартмауҙарын, шырпы менән уйнамауҙарын, ҡоролмалар янында костерҙар яндырмауҙарын күҙәтергә кәрәк.

Янғын ҡурҡынысын барлыҡҡа килтереүе мөмкин булған бөтә нәмәне юҡ итеүҙә уҡыусы балалар янғын охранаһына ярҙам итергә тейештәр. Янғын именлеге ҡағиҙәләрен боҙоу тураһында урындағы янғын охранаһына хәбәр итергә кәрәк.

Ата-әсәләр менән бер рәттән, уҡытыусылар, комсомол һәм пионер ойошмалары балалар араһында аңлатыу эштәрен алып барырға тейештәр. Беседалар ваҡытында һәм йыйылыштарҙа уҡыусыларға балаларҙың ут менән шаярыуҙарына юл ҡуймаҫҡа кәрәклекте аңлатырға, бындай шаярыуҙарҙың ауыр эҙемтәләргә килтереүен күрһәтергә кәрәк.

Башҡорт АССР-ы Эске эштәр министерствоһының янғын охранаһы управлениеһе.

„ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН", „КРАСНАЯ БАШКИРИЯ", „ҠЫҘЫЛ ТАҢ", „ЛЕНИНЕЦ", „ЛЕНИНСЕ"

газеталарына 1951 йылға подписка ҡабул итеү дауам итә.

Подписка „Союзпечать"тең ҡалаларҙағы бүлектәрендә, связь бүлектәрендә һәм агентстволарында, подписка ҡабул итеү пункттарында, шулай уҡ предприятиеләрҙә, учреждениеләрҙә, совхоздарҙа һәм колхоздарҙа подписка буйынса общественный уполномоченныйҙар тарафынан ҡабул ителә.

Өфөлә зверинец

Өфөнөң Матросов исемендәге үҙәк культура һәм ял паркында государство күсмә зверинецы асылды.

Бында ҙур группа ҡырағай хайуандар күрһәтелә. Улар араһында: арыҫландар юлбарыҫ, юлбарыҫтар менән арыҫландарҙың гибриде, айыуҙар (поляр аҡ айыуы, Гималай, Сирия айыуҙары, ҡәрән айыуҙар һәм йәш айыу балалары), бүре, һеләүһендәр, ҡамыш бесәйе аҡ төлкө, буйлы һыртлан, төлкөләр, дикобраз, һыуыр, ике үркәсле дөйә, ишәк, сыбар болан, гүзәл болан, архар, сип, лань, ҡыр кәзәһе, гриф, таҙ бөркөт, дала бөркөттәре, тутый коштарҙан: амазонка тутый кошо, һары бүрекле тутый кош, Австралия страусы, алтын һәм маньчжурия ҡырғауылдары, мысыр тауығы, төрлө өйрәктәр, эре һәм ваҡ маймылдар, тейендәр, йыландар, балыҡтар, башҡа ҡыр хайуандары, һәм коштар бар.

Хайуандар киске 7 сәғәттә ашатыла.

Зверинец һәр көндө иртәнге 9 сәғәттән төнгө 12 сәғәткә тиклем асыҡ.

Зверинецҡа билет алыусылар паркҡа инеү өсөн хаҡ түләмәйҙәр.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында—«КӘТО һәм КОТӘ». Киске ... сәғәт 30 минутта башлана.

Рус драма театрында — Луначарский исемендәге баҡсала — «ТОРМОШ ӨСӨН КӨРӘШ». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СПОРТ НАМЫҪЫ».

«Салауатта» — «ҠАҘАҠ ГАЛОТА ... РАҺЫНДА УЙҘАР».

«Уралда» — «СПОРТ НАМЫҪЫ».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «ҠЫЙЫУ КЕШЕЛӘР».

Матросов исемендәге паркта. Бөгөн ... һәр көндө цирк артисе Максименко ... ҡарыуында аттракцион, һауала ... Киске 10 сәғәттә башлана. Духовой ... кестр уйнай.

Өфө һәм Черниковск ҡалаларындағы эштәр начальнигы управлениеһына ... оҫталары, ташсылар, штукатурҙар, малярҙар, 1, 2 һәм 3-сө класлы шоферҙар, йөк ташыусылар, грузчиктар, төрлө ... селәр, десятник-мастерҙар, эш ... ҡарыусылар талап ителә.

Эш хаҡы государство расценкалары буйынса сдельный тәртиптә түләнә. ... ғыҙаҡтарға дөйөм торлаҡ, семьялы... ға — бүлмәләр бирелә.

Эшкә инеү тураһында булған бөтә ... рауҙар буйынса эштәр начальниге управлениеһенең кадрҙар бүлегенә түбәндәге адрес менән мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Революционная урамы, 37, кадрҙар бүлеге, телефон 2-90-63.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П04327 — Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. — Тиражы 25000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттаре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 116(8833)
1951 йыл
15
ИЮНЬ
йома

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башҡорт АССР-ы Бишбүләк районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең йөкләмәһе (1-се бит).

Башҡорт АССР-ы Дүртөйлө районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең йөкләмәһе (1-се бит).

Башҡорт АССР-ы Йәрмәкәй районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС һәм совхоз работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең йөкләмәһе (1-се бит).

Г. Копченов. — Фән ҡаҙаныштарын — колхоз малсылығына! (1-се бит).

Корея ҡатын-ҡыҙҙары Демократик союзының председателе Пак Ден Айға халыҡ-ара Сталин премияһын биреү (1-се бит).

ПРОПАГАНДИСТӘРГӘ ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА. — В. Горин. — Социалистик ярыштың бөйөк көсө (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. — Ғ. Ибраһимов. — Партияның район конференцияһы ҡарары үтәүҙә планлы эш алып барырға (2-се бит).

БАШҠОРТОСТАН НЕФТСЕЛӘРЕ! ИПТӘШ СТАЛИНГӘ БИРГӘН ВӘҒӘҘӘНЕ НАМЫҪ МЕНӘН ҮТӘПЕК! (3-сө бит).

Б. Әхмәров. — Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү резервтары (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. Ә. Әхтәмов. — Орлоҡсолоҡ участкаларын тәрбиәләү (4-се бит).

ТЫНЫСЛЫҠ ПАКТЫ ӨСӨН! (4-се бит).

Пропагандист кадрҙарын әҙерләүгә—серьез иғтибар

Тыуған илебеҙ үҙенең тарихи үҫешенең бик мөһим осорона — социализмдән аҡрынлап коммунизмға күсеү осорона инде һәм совет халҡы ғәйәт ҙур рухланыу менән коммунизмдең бөйөк ҡоролоштарын төҙөү эшенә кереште.

Хәҙер административ-хужалыҡ һәм культура эшенең бөтә тармаҡтарында эшләүсе кадрҙарҙың идея-теоретик кимәлен күтәреү тормошта иң мөһим, государство әһәмиәтендәге эш булып тора. Сөнки тик марксизм-ленинизмға эйә булған да ғына, йәмғиәттең үҫеш закондары тураһындағы фәнгә, коммунизм төҙөү тураһындағы фәнгә эйә булғанда ғына кадрҙарыбыҙ коммунизм төҙөүҙең бөйөк һәм ҡатмарлы бурыстарын уңышлы хәл итә аласаҡ.

Бына шуға күрә лә беҙҙең партиябыҙ, иптәш Сталин үҙе марксизм-ленинизмды пропагандалау эшен ойоштороуға, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүгә айырыуса ҙур иғтибар бирәләр. Һәм беҙҙә кадрҙарҙың идея-теоретик кимәлдәрен күтәреү өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған. Марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәре Советтар Союзының бөтә халыҡтары телдәрендә сығарыла; партия кабинеттәренең, библиотекаларҙың һәм лекторийҙарҙың киң селтәрҙәре булдырылған; марксизм-ленинизмдең киске университеттәре, партия мәктәптәре, түңәрәктәр, политик мәктәптәр ойошторолғандар. Пропагандистәр өсөн семинарҙар, теорияны үҙ алдына өйрәнеүселәр өсөн лекциялар, консультациялар үткәреләләр. Былар бөтәһе лә кадрҙарыбыҙға большевизм тарихын һәм теорияһын тәрән өйрәнеүгә ҙур ярҙам иттеләр һәм итәләр.

Иптәш Сталин әҫәрҙәренең беренсе томы башҡорт теленә тәржемә ителеп баҫып сығарылыу Башҡортостан партия ойошмаһының политик һәм культура тормошонда ҙур ваҡиға булды. Ул күп һанлы башҡорт кадрҙарына бөйөк юлбашсыбыҙҙың тормошо һәм көрәш юлдары менән, марксистик-ленинсе теорияға һәм практикаға И. В. Сталиндең индергән ғәйәт ҙур вкладтары менән үҙ тыуған телендә уҡып танышырға мөмкинлек бирҙе.

Партиябыҙ Үҙәк Комитеты етәкселегендә үткәрелгән бөтә был саралар республикабыҙҙың партия ойошмаларына партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙы байтаҡ ойошҡанлыҡ менән алып барырға һәм тамамларға мөмкинлек бирҙе. Ауыл һәм ҡала партия ойошмалары тарафынан үткәрелгән йомғаҡлау занятиеләренең һөҙөмтәләре быны асыҡ күрһәтәләр. Мәҫәлән, Баймаҡ районының йылҡысылыҡ заводы, «Ҡыҙыл Байраҡ», «Һаҡмар», «Ударник», «Прәндек», «Ҡыҙыл маяҡ» колхоздары эргәһендәге тәүге партия ойошмаларында йомғаҡлау занятиеләре уңышлы үтте һәм тыңлаусыларҙың материалды тәрән үҙләштергәнлектәрен күрһәтте. Балтас районының Ҡарыш урта мәктәбе эргәһендәге партия ойошмаһында теорияны үҙ алдына өйрәнеүселәр менән булған йомғаҡлау беседаһы партия тарихын үҙ алдына өйрәнеүселәрҙең үҙ белемдәрен күтәреү өҫтөндә ныҡышмалы эшләгәнлектәрен күрһәтте.

Ағымдағы уҡыу йылында партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙың үҙған йылдарға ҡарағанда байтаҡ ойошҡан рәүештә үтеүенең төп сәбәптәренән береһе итеп, һис шикһеҙ, пропагандистар кадрҙары менән эшләүҙең яҡшырыуын алырға була. Ағымдағы йылда партия мәғарифенең төрлө формалары менән етә меңбиш йөҙҙән артыҡ пропагандист етәкселек итте, уларҙың 80 проценттан артығы юғары һәм урта белемле булды. Уҡыу йылы алдынан ике меңдән артыҡ пропагандист төрлө сроктардағы курстан үткәрелде. Уҡыу йылы осоронда үткәрелгән пропагандистәр семинарҙары ла үҙҙәренең эштәрен байтаҡ яҡшырттылар.

Ләкин, туп-тура әйтергә кәрәк, ВКП(б)-ның ҡайһы бер райкомдары пропагандист кадрҙарына һаман да әле тейешле баһа биреп еткермәйҙәр. Мәҫәлән, Ҡандра, Благовар райондарында ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү түңәрәгенә етәксе итеп тейешле әҙерлеге булмаған һәм үҙ өҫтөндә эшләргә тырышмаған кешеләрҙе билдәләү ваҡиғалары булды. Пропагандистәр семинары пропагандистәрҙең теоретик белемдәрен күтәреүгә һәм методик яҡтан тәжрибәһен арттырыуға ярҙам итә. Шуға ҡарамаҫтан, ВКП(б)-ның Белоҡатай, Матрай һәм башҡа ҡайһы бер район комитеттәре пропагандистәр семинарҙарын һүлпән ойошторҙолар. Пропагандистәрҙең семинарға йөрөшө түбән булды. Матрай районында, мәҫәлән, айырым пропагандистәр семинарға уҡыу йылының яртыһы үткәнсе йөрөмәне.

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарға йомғаҡ яһағанда ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттәре, тәүге ойошмалары түңәрәктә, политик мәктәптә йәки үҙ алдына уҡыуҙарҙың сифат күрһәткестәренә иғтибар итеү менән бер рәттән, пропагандистәрҙең эшенә лә йомғаҡ яһарға тейештәр.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының күрһәтмәһе нигеҙендә быйыл да йәйге осорҙа ВКП(б) Өлкә Комитеты эргәһендә пропагандистәрҙең бер айлыҡ курсы үткәрелә. Курста ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын юғарылатылған типта өйрәнеү түңәрәге пропагандистәре, диалектик һәм тарихи материализмды өйрәнеү түңәрәге пропагандистәре, штаттан тыш лекторҙар һәм консультанттар, партияның киске мәктәптәренең ВКП(б) тарихы преподавателдәре уҡыясаҡ. ВКП(б) район һәм ҡала комитеттәре был курстарға пропагандистлек эшендә үҙен яҡшы итеп танытҡан, партия мәғарифе системаһында занятиеләрҙең сифатын артабан күтәреүгә булдыҡлы, үҫә торған пропагандистәрҙе һайлап алып ебәрергә бурыслылар.

Ләкин пропагандистәр менән эшләү бурысы быяның менән генә сикләнмәй. Партияның тәүге ойошмалары, район һәм ҡала комитеттәре алда торған уҡыу йылына әҙерлек сараларын билдәләгәндә, пропагандистәрҙе, уларҙың әҙерлектәренә ҡарап, дөрөҫ файҙаланыуға, уҡыу йылы башланғансы күп алда пропагандистәр менән системалы эш башлауға, алдынғы пропагандистәрҙең ыңғай эш тәжрибәләрен һәр яҡлап өйрәнеүгә, уны бөтә пропагандистәрҙең эш практикаһына индереүгә айырыуса иғтибар итергә тейештәр.

Пропагандист үҙенең теоретик белемен күтәреү өҫтөндә көн һайын эшләргә тейеш. Йәйге осор уның өсөн үҙ өҫтөндә эшләүҙән туҡталыу түгел, ә ныҡышмалы уҡыу, өҫтәмә сығанаҡтар туплау, уларҙы өйрәнеү, үҙенең дөйөм кругозорын артабан киңәйтеү осоро ул.

Большевистик пропагандист массаларға Ленин—Сталиндең бөтә нәмәне еңеүсе бөйөк идеяларын алып килергә саҡырылған. Был бурысты уңышлы үтәүҙә пропагандисҡа ярҙам итеү—партия ойошмаларының мөһим бурысы.

Әҙерләүҙәр органы работниктәрен ордендәр һәм медалдәр менән наградлау

СССР Верховный Советы Президиумының 1951 йыл 30 майҙағы Указы менән оҙаҡ йылдар буйына эшләп, яҡшы эш өлгәләре күрһәткән өсөн СССР Әҙерләүҙәр Министерствоһы системаһы работниктәренән Башҡорт АССР-ы буйынса 84 кеше ордендәр һәм медалдәр менән наградланды.

Шул иҫәптән Заготживсырьеның Башҡортостан контораһы әҙерләүҙәр бүлегенең өлкән товароведы А. И. Ничугин, Дәүләкәндәге 3-сө номерлы тирмән заводы крупчаткигенең ярҙамсыһы П. М. Титонов иптәштәр Ленин ордене менән, Әҙерләүҙәр министерствоһының Әлшәй районы буйынса вәкиле А. П. Лактионов Заготживсырьеның Башҡортостан конторыһының пушмехсырье группаһы етәксеһе А. В. Левков, Дәүләкәндәге 3-сө номерлы тирмән заводының механигы С. П. Копавев иптәштәр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградландылар. Почет билдәһе ордене менән наградланыусылар араһында Заготзерноның Аксен пункты өлкән бухгалтеры А. К. Әлһәмов, Дәүләкән тирмән комбинатының директоры В. В. Алексеев, СССР Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡортостан АССР-ы буйынса вәкиле Һ. В. Вәлиев, Әҙерләүҙәр министерствоһының Дәүләкән районы буйынса вәкиле Г. С. Ғарифуллин, Әҙерләүҙәр министерствоһының Миәкә районы буйынса вәкиле М. С. Сазыков, Заготживсырьеның Стәрлетамаҡ район-ара контораһы директоры З. С. Сафин, Заготживсырьеның Благовещен район әҙерләүҙәр контораһы директоры В. И. Хәтипов һәм башҡа иптәштәр бар. «Хеҙмәт батырлығы өсөн» медале менән 33 кеше, «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медале менән 19 кеше наградланды.

Горький көнө алдынан

Өфө. Совет әҙәбиәтенең нигеҙен һалыусы А. М. Горькийға арнап республика библиотекаһында китап күргәҙмәһе ойошторолдо. Унда Алексей Максимовичтең әҫәрҙәре, фото портреттәре һәм төрлө мәҡәләләре урынлаштырылған. Күргәҙмәнең иҡенсе бүлеге библиотекаға килеүселәрҙе айырыуса ҡыҙыҡһындыра. Ул Мәскәү һәм Ленинград театрҙарының А. М. Горький менән булған иҗади бәйләнешенә һәм күренекле искусство мастерҙарының Горький образдары өҫтөндә эшләүҙәренә арналған. Күргәҙмәгә «Мещандар», «Дошмандар», «Тормош төбөндә» һәм башҡа пьесаларҙан төрлө фото иллюстрациялар урынлаштырылған.

Башҡорт АССР-ы Бишбүләк районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Украина игенселәренең бөйөк Сталинға яҙған ҡатын дөйөм йыйылыштарҙа өйрәнеп, беҙ, Бишбүләк районының колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре, 1951 йылға ауыл хужалығы алдына партия һәм хөкүмәт тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы уңышлы үтәү өсөн Бөтә Союз социалистик ярышына ҡушылырға бөрҙәм ҡарар иттек һәм үҙебеҙгә түбәндәге йөкләмәләрҙе алдыҡ:

Бөтә сәсеүлек майҙандарынан уртаса: арыш һәм бойҙайҙың һәр гектарынан 90-шар бот, һолонан — 95-әр бот, арпанан — 80-шәр бот, борсаҡтан 90-шар бот, тарынан—85-әр бот, ҡара бойҙайҙан—75-әр бот, көнбағыштың һәр гектарынан 50-шәр бот урожай алыуға өлгәшергә. Йылҡысылыҡты үҫтереүҙең 1951 йылға билдәләнгән государство планын 105 процентҡа үтәргә. Колхоздарҙың продукт бирә торған общественный малсылығын үҫтереүҙең йыллыҡ планын: мөгөҙлө эре малдар буйынса — 105 процентҡа, һарыҡтар һәм сусҡалар буйынса — 110 процентҡа, ҡоштар буйынса — 100 процентҡа үтәргә.

Фуражлы һәр бер һыйырҙан 1750-шәр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 2,7-шәр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы, һәр бер тауыҡтан 70-әр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

Государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда, 1951 йылдың 25 сентябренә; майлы һәм техник культуралар әҙерләү планын Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 34 йыллығына; картоф һәм йәшелсә тапшырыу планын 1951 йылдың 15 октябренә үтәргә. Государствоға ит тапшырыу планын 1 октябргә, башҡа төр малсылыҡ продукттары тапшырыу планын 1951 йылдың 1 ноябренә үтәргә.

Йөкләмә Бишбүләк районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Башҡорт АССР-ы Дүртөйлө районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Украина игенселәренең башланғысына эйәреп һәм ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарының яңы күтәрелеше өсөн бөтә халыҡ социалистик ярышына ҡушылып, беҙ, колхозсылар, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре, үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе иҫәпләгәндән һуң, 1951 йылға түбәндәге йөкләмәне алабыҙ:

Бөтә сәсеүлектәрҙең дөйөм майҙанының һәр гектарынан уртаса: арыштан 110-ар бот, ә 2500 гектар майҙандағы арыштың һәр гектарынан 130-ар бот, бойҙайҙан 100-әр бот, ә 3 мең гектар майҙандағы бойҙайҙың һәр гектарынан 125-әр бот, борсаҡтан — 80-шәр бот, тарынан — 75-әр бот, ә 764 гектар майҙандағы тарының һәр гектарынан 120-шәр бот, ҡара бойҙайҙан — 85-әр бот игеп, күк һағыҙҙың бер йыллыҡ плантацияһының һәр гектарынан 21-әр центнер тамыр һәм ике йыллыҡ плантацияһынан 10-ар центнер тамыр урожайы, картофтың һәр гектарынан кәмендә 140-ар центнер урожай алырға.

1951 йылда мөгөҙлө эре малдар үрсетеүҙең минимум планын 108 процентҡа, һарыҡтар һәм сусҡалар буйынса 121 процентҡа, ҡоштар буйынса 100 процентҡа үтәргә. Быйыл йылҡысылыҡты үҫтереүҙең ике йыллыҡ планын үтәргә.

Һәр бер 100 баш инә малдан: 95 быҙау, 120 бәрәс, 65 ҡолон, һәр бер инә сусҡанан 9-ар сусҡа балаһы алып үстерергә.

Һәр бер һыйырҙан 1600-әр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 2,2-шәр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы һәм һәр бер тауыҡтан 70-әр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

Иген әҙерләүҙең государство планын 1951 йылдың 1 октябренә, малсылыҡ продукттары тапшырыу планын 1 ноябргә үтәргә.

Йөкләмә Дүртөйлө районы колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәренең йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Башҡорт АССР-ы Йәрмәкәй районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС һәм совхоз работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Совет Украинаһы социалистик игенселеге эшсәндәренең халыҡтар юлбашсыһы иптәш Сталинға яҙған хаты менән танышҡандан һуң, үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе ентекле иҫәпләп һәм үҙебеҙҙең көсөбеҙгә ышанып, беҙ, колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз работниктәре 1951 йылға ҡарата ошондай йөкләмәне алабыҙ:

Бөтә сәсеүлектәр майҙандарының һәр гектарынан уртаса: бойҙай һәм арыштан 90-шар бот, был культураларҙың айырым участкаларының һәр гектарынан 109—112-шәр бот, ҡара бойҙайҙан — 64-әр бот, киндерҙән—36-шар бот, картофтан—830-ар бот урожай алыуға өлгәшергә.

Продукт биреүсе общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын һәр бер колхозда тулыһынса үтәргә, 1951 йылдың аҙағына тиклем мөгөҙлө эре малдар, һарыҡтар һәм сусҡалар үрсетеү буйынса арттырып үтәргә.

Һәр бер һыйырҙан 1750-шәр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 2,85-әр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы һәм һәр бер тауыҡтан 57-шәр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

Һәр бер 100 баш инә малдан кәмендә: 94 быҙау, 19 бәрәс, 76 ҡолон, һәр бер инә сусҡанан 11-әр сусҡа балаһы алып үстерергә.

Общественный малсылыҡҡа ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырырға, мал аҙығы әҙерләүҙең государство планын арттырып үтәргә.

Иген әҙерләүҙең государство планын срогынан алда — 1 октябргә үтәргә. Көнбағыш, киндер һәм картоф тапшырыу планын 1 ноябргә, малсылыҡ продукттары етештереү планын Бөйөк Октябрҙең 34 йыллығына үтәргә.

Йөкләмә Йәрмәкәй районы колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары МТС һәм совхоз работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәренең йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Договор йөкләмәләре үтәлә

Беҙҙең МТС эшләтелгән 11 колхозды хеҙмәтләндерә. Беҙ колхоздар менән төҙөшкән договор йөкләмәләрен уңышлы үтәйбеҙ. Быйыл яҙғы осорҙа 6853 гектар ер һөрөлдө, 12020 гектар ашлыҡ сәселде, 11029 гектар культивацияланды, 22360 гектар ер тырматылды. Шулай уҡ 6100 гектар майҙанда пар һөрөлдө.

Иптәш Нәжмиев етәкселек иткән трактор бригадаһы пар һөрөү планын 131 процентҡа үтәне. Был эш шулай уҡ Бәдретдинов һәм Хәбибуллин иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадаларында ла арттырып үтәлде.

Механизаторҙар ярышында иптәш Нәжмиев бригадаһы алдынғылыҡты яулап алды. Уға МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде. Был бригадала был көнгәсә 2018 килограмм, ә МТС-тың 6 трактор бригадаһы буйынса 6009 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһалды.

Беҙҙең МТС коллективы үҙе хеҙмәтләндергән колхоздарҙа трактор эштәренең йыллыҡ планын договорҙа күрһәтелгән сроктарҙа үтәп сығасаҡ.

Хәҙер беҙ урожай йыйыуға әҙерләнәбеҙ.

З. Ардаширов,

Саҡмағош районы Рәжәп МТС-ы директоры.

ФӘН ҠАҘАНЫШТАРЫН—КОЛХОЗ МАЛСЫЛЫҒЫНА!

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планы малдарҙың һанын арттырыу, уның сифатын яҡшыртыу һәм продуктивлеген күтәреү эштәренең дөрөҫ бәйләнештә алып барылыуын талап итә. Малсылыҡ работниктәре ошо бурыстарҙы үтәүгә саҡырылғандар.

Шулай ҙа республикабыҙҙың колхоздары был яуаплы бурысты уңышлы хәл итәләр, тип әйтеп булмай әле. Айырым колхоздарҙа йыл һайын һәр бер һыйырҙан уртаса 900 литр һөт, һәр бер һарыҡтан 1,5 — 2 килограмм йөн алыу менән генә государство планын үтәүҙе тәьмин итеп булмай.

Малдарҙың сифатын яҡшыртыу, продуктивлеген күтәреү эше байтаҡ дәрәжәлә уларҙы тоҡомлороуҙы һәм яһалма орлоҡландырыуҙы дөрөҫ ойоштороуға бәйле булып тора. Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа һәр бер инә малдан йыл һайын үрсем алыуға өлгәшергә кәрәк. Яҡшы үрсем алыу өсөн малдарҙы яҡшы тәрбиәләү һәм ашатыу, шулай уҡ сифатлы тоҡом үрсеткестәр булдырыу талап ителә. Тик шул шарттарҙа ғына яҡшы үрсемдәр алыуға өлгәшеп була.

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа яҡшы тоҡом үрсеткестәр етешмәгәнлектән, яҡшы тоҡомло үгеҙҙәрҙе, тәкәләрҙе һәм айғырҙарҙы рациональ файҙаланыуҙы ойошторорға, уларҙан мөмкин тиклем күберәк үрсем алыу сараларын күрергә кәрәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был эшкә етерлек иғтибар ителмәй. Күп кенә хужалыҡтарҙа әлегә тиклем тоҡом үрсеткестәрҙе ирекле тоҡомлороуҙа файҙаланыу бөтөрөлмәгән әле. Ҡиммәтле тоҡом үрсеткестәр йәйге көтөү осоронда йыш ҡына инә малдар менән бергә йөрөтөләләр. Хатта насар тоҡомло үгеҙҙәр, тәкәләр һәм айғырҙар ҙа көтөүгә ҡушып ебәреләләр. Бигерәк тә нәҫел йөнлө һарыҡтар араһында тупаҫ йөнлө тәкәләрҙең бергә йөрөтөлөүе бөтөрөлмәгән.

Бындай хәл үҙ ирекле тоҡомлороуға алып бара. Ә ул, үҙ сиратында, малдарҙың тоҡом сифатының түбән булыуына килтерә.

Был малдарҙың тыу һәм ҡыҫыр ҡалыуҙарына сәбәп була. Үҙ ирекле тоҡомлороу шулай уҡ көтөүҙә йоғошло ауырыуҙарҙың таралыуына, зоотехник сараларҙы иҫәпкә алыуҙы һәм тоҡомсолоҡто дөрөҫ ойоштороуҙы ҡыйынлаштырыуға килтерә.

Үҙ ирекле тоҡомлороу малсылыҡ эшендә культураһыҙлыҡты сағылдыра. Шуға күрә уға сик ҡуйырға кәрәк. Тоҡом үрсеткестәрҙе йыл буйына малдарҙан айырым тоторға, иң мөһиме яһалма орлоҡландырыу сараларын ойошторорға кәрәк.

Яһалма орлоҡландырыу буйынса айырым колхоздар уңышлы эшләйҙәр. Иглин районы «Бривайс-Арайс» колхозында яһалма орлоҡландырыу техниге М. И. Рудольф 1948 йылда 389 баш Бестужев тоҡомло һыйырҙарҙы тоҡомлороп, планды 111 процентҡа үтәне. Шул иҫәптән 186 баш һыйыр һәм таналы яһалма орлоҡландырыуҙа «Монополец» исемле үгеҙ файҙаланылды. Был үгеҙ 950 килограмм ауырлыҡта, элита рекорд класлы тоҡом үрсеткес булып тора. Мария Ивановна Рудольф 13 йыл инде яһалма орлоҡландырыу пунктында эшләй, ул йыл һайын яһалма орлоҡландырылған малдарҙың 94 — 99,6 процентының быуаҙ булыуына өлгәшә.

Илеш районы «Ҡыҙыл юл» колхозының техниге Мәрйәм Әхмәтова 1949 йылда нәҫел йөнлө тәкәләр менән 1216 һарыҡты орлоҡландырып, планды 121,6 процентҡа үтәне һәм шуларҙың 99,1 процентының быуаҙ булыуына өлгәште.

Яһалма орлоҡландырыу эшен ойоштороуҙа яҡшы күрһәткестәр биргән өсөн күп кенә пункт работниктәре аҡсалата бүләкләнделәр. Мәҫәлән 1950 йылда М. И. Рудольф 1821 һум, М. Ә. Әхмәтова 1187 һум аҡса менән бүләкләнде.

Партия һәм хөкүмәт колхоз һәм совхоз общественный малсылығында яһалма орлоҡландырыуҙы ҡулланыуға ныҡ әһәмиәт бирәләр. Совет государствоһы колхозларыбыҙҙағы яһалма орлоҡландырыу пункттарҙы өсөн йыһаздарҙы түләүһеҙ бирҙе. Шулай уҡ был эштәге алдынғылар йыл һайын аҡсалата бүләкләнәләр. Шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер райондарҙың ауыл хужалығы органдары етәкселәре һәм специалистәре был сараларҙы баһалап еткермәйҙәр. Мәҫәлән, симменталь малдарының тоҡомсолоҡ рассадниге зонаһына ингән Мәләүез, Ҡуйырғаҙы, Федоровка райондары яһалма орлоҡландырыуҙы үткәреүгә тейешле иғтибар итмәйҙәр. Бындай хәл башҡа райондарҙа ла бар. Шул сәбәпле 1950 йылда малдарҙы яһалма орлоҡландырыу планы һарыҡтар буйынса 62, мөгөҙлө эре малдар буйынса 86 процентҡа ғына үтәлде. Был эш быйыл да бик насар бара.

Колхоздарҙы эрелләтеү малдарҙы яһалма орлоҡландырыу методын киң ҡулланыуға мөмкинлек бирә. Был мөмкинлек тулыһынса файҙаланылырға тейеш. Фәндең был ҡиммәтле өлгәшеүен файҙаланыу — малдар һанын үҫтереүҙә, уларҙың тоҡом сифатын яҡшыртыуҙа һәм продуктивлеген күтәреүҙә ҙур ярҙам итәсәк.

Г. Копченов,

БАССР Ауыл хужалығы министерствоһының өлкән зоотехнигы.

„Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн" халыҡ-ара Сталин премиялары буйынса комитетта

Корея ҡатын-ҡыҙҙары Демократик союзының председателе Пак Ден Айға халыҡ-ара Сталин премияһын биреү

13 июнда Кремлдә, Свердлов залында, совет общественносының күп һанлы вәкилдәре ҡатнашлығында Кореяның күренекле общественный деятеле, тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу һәм нығытыу өсөн актив көрәшсе, Корея ҡатын-ҡыҙҙары Демократик союзының председателе Пак Ден Айға «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара Сталин премияһын биреү булып үтте.

Лауреатты тыныслыҡты яҡлауҙың Совет комитеты члендары, совет ҡатын-ҡыҙҙары Антифашистик комитетының, совет йәштәре Антифашистик комитетының члендары, күренекле ғалимдар, яҙыусылар, искусство деятелдәре, баҫҡала предприятиеләренең стахановсылары һәм стахановкалары ҡотланы. Үҙенең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн батырҙарса көрәшеүсе героик Корея халҡының данлы ҡыҙының залда күренеүен йыйналыусылар оҙаҡ дауам иткән ҡул сабыуҙар менән ҡаршыланылар.

Халыҡ-ара Сталин премиялары буйынса Комитеттың 1951 йылдың 6 апрелдәге ҡарары иғлан ителә. Тыныслыҡты һаҡлап ҡалыу һәм нығытыу өсөн көрәш эшендә күренекле хеҙмәттәре өсөн Пак Ден Айға «Халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халыҡ-ара Сталин премияһы бирелде. Комитет председателе академик Д. В. Скобельцин Пак Ден Айға халыҡ-ара Сталин премияһы лауреатының дипломын һәм күкрәккә тағылып йөрөтөлә торған алтын медалде тантаналы рәүештә тапшыра.

— «Һеҙҙең арымай-талмай эшләүегеҙ, — ти академик Скобельцин, — хәҙерге ваҡытта тыныслыҡ һәм демократия байрағы аҫтында берләшкән бөтә прогрессив кешелектең дөйөм эшенә ҙур вклад булып тора. Хеҙмәтсәндәрҙең бөйөк юлбашсыһы һәм уҡытыусыһы, бөтә донъяла тыныслыҡ байраҡсыһы — Иосиф Виссарионович Сталин исемен йөрөткән премияны һеҙгә биреү һеҙҙең күренекле эшмәкәрлегегеҙ бөтә илдәрҙәге тыныслыҡ өсөн көрәшселәрҙең иң киң ҡатламдарында ҡаҙанған дөйөм танылыуҙың күҙәлгәнеше булып тора.

Һеҙгә был премияны биреп, халыҡ-ара Сталин премиялары буйынса Комитет халыҡтар араһында тыныслыҡты һәм дуҫлыҡты нығытыу эшендә һеҙҙең шәхси хеҙмәттәрегеҙҙе таныу менән бер рәттән шулай уҡ Кореяның батыр халҡына беҙҙең ҡайнар мөхәббәтебеҙҙе һәм теләктәшлегебеҙҙе, уның тыныс хеҙмәтенә һәм тыныслыҡ һөйөүсе ватанына ҡул һуҙған агрессорҙарға ҡаршы уның героик көрәше менән беҙҙең тәрән һоҡланыуыбыҙҙы ла белдерергә теләне».

Совет ҡатын-ҡыҙҙары Антифашистик комитеты председателенең урынбаҫары Н. М. Парфенова, тыныслыҡты яҡлауҙың Совет комитеты председателе Н. С. Тихонов, совет йәштәре Антифашистик комитеты президиумының члены Т. Н. Ершова шулай уҡ ҡотлау телмәрҙәре менән сығып һөйләнеләр.

Ҡатнашыусылар тарафынан йылы ҡаршыланған халыҡ-ара Сталин премияһы лауреаты Пак Ден Ай яуап телмәре менән сыҡты.

Бөйөк рус драматургы

(А. Н. Островскийҙең үлеүенә 65 йыл тулыуға ҡарата).

Бөйөк рус драматургы А. Н. Островскийҙең үлеүенә 14 июнда 65 йыл тулды. Яҙыусының бай әҙәби мирасы рус һәм донъя искусствоһының хазинаһына инде. Рус классик драматургияһына нигеҙ һалыусы Островский 40 йыллыҡ әҙәби эшмәкәрлеге осоронда 50-гә яҡын пьеса яҙҙы.

Островскийҙең драматургияһы беҙҙең илебеҙҙә бөтә халыҡтың танылыуын ҡаҙанды. Островскийҙең пьесалары бөтә туғандаш союзный республикаларҙың театрҙарында ҡуйыла.

Революцияға тиклем ни бары ике телдә сығарылған Островский әҫәрҙәренең тиражы 250 мең дананан аҙ ғына артыҡ ине. Совет власы йылдарында Островскийҙең пьесалары 27 телдә 8.300 меңдән артығыраҡ данала 300 баҫма булып сығарылды. «Тәшмәлә урын», «Фәҡирлек ғәйеп түгел» һәм башҡа күп кенә пьесалары айырым китаптар булып күп тапҡырҙар баҫылып сыҡтылар.

Совет халҡы бөйөк рус драматургының иҫтәлеген изге һаҡлай. Уның үлеүенә 65 йыл тулыу айҡанлы уның иҗадына арналған күргәҙмәләр ойошторола, конференциялар, докладтар, беседалар үткәрелә.

(ТАСС).

ПРОПАГАНДИСТАРҒА ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА

Социалистик ярыштың бөйөк көсө

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планының уңышлы үтәлеше — беҙҙең коммунизм юлы менән алға яңы ҙур аҙым атлауыбыҙҙы күрһәтә торған, бөтә донъя күләмендә тарихи әһәмиәтле еңеү ул. Был еңеү — бөйөк Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә беҙҙең героик халҡыбыҙ тарафынан төҙәлгән социалистик обществоның өҫтөнлектәренең бик асыҡ күренеше.

1933 йылда иптәш Сталин беренсе биш йыллыҡты уңышлы рәүештә дүрт йылда үтәүҙең йомғаҡтарына анализ яһағанда был тарихи еңеүҙе тәьмин иткән төп көстәрҙе күрһәтте.

«Был, барыһынан да элек, — тине иптәш Сталин, — социалистик ярышты һәм ударсылыҡты йәйелдереүҙә инженер-техник кадрҙар менән бергә бик ҙур энергия күрһәткән миллионлаған эшселәр һәм колхозсылар массаларының активлеге һәм үҙ-үҙен аямаусанлығы, энтузиазмы һәм инициативаһы. Был хәлдән башҡа беҙ маҡсатҡа ирешә алмаған булыр инек, бер аҙым да алға китә алмаған булыр инек, — быға шик булыуы мөмкин түгел.

Был, икенсенән, массаларҙы алға саҡырған һәм маҡсатҡа барыу юлындағы бөтә һәм һәр төрлө ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыҡҡан партияның һәм хөкүмәттең ныҡлы етәкселеге.

Аҙаҡ килеп, — был — бөтә һәм һәр төрлө ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығыу өсөн кәрәк булған бик ҙур мөмкинлектәрҙе үҙ эсенә алған совет хужалыҡ системаһының үҙенә айырым яҡшы сифаттары һәм өҫтөнлектәре.

СССР-ҙың тарихи еңеүен билдәләгән төп эс көс ана шулар». («Ленинизм мәсьәләләре», 11 баҫма, 396-сы бит).

Һуғышҡа тиклемге сталинсе биш йыллыҡтарҙың еңеүен билдәләгән был төп көстәр һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында тағы ла ҙур көләс һәм тәрәнлек менән йәйелделәр, социализмдан аҡрынлап коммунизмға күсеү ғәмәлгә ашырыла торған бер осорҙа илебеҙ үҫешенең бөтә барышына гигант йоғонто яһанылар.

Буржуазияның уҡымышлы лакейҙәре, йәнәһе, социализм ярышты һүндерә, тигән булып, уны нәфрәт итеү өсөн бөтә көстәрен һалып тырышайнылар. Ленин һәм Сталин был әкиәттең келен күккә осорҙолар.

«Социализм,—тип күрһәтте Ленин, — ярышты һүндермәй генә түгел, ә киреһенсә, уны тәүге тапҡыр киң рәүештә, ысын-ысынлап массовый күләмдә ҡулланырға, хеҙмәтсәндәрҙең ысын-ысынлап күпселеген, улар үҙҙәрен күрһәтә, үҙҙәренең булдыҡлылыҡтарын йәйелдерә, таланттарын аса ала торған эш аренаһына ылыҡтырырға беренсе тапҡыр киң мөмкинлек тыуҙыра, бындай таланттар халыҡта — иге-сиге булмаған шишмә кеүек күп, капитализм уларҙы меңәрләп һәм миллионлап иҙеп, баҫып, быуып килде» (Әҫәрҙәр, 26 том, 367-се бит).

Иптәш Сталин, илебеҙҙәге социалистик төҙөлөш тәжрибәһенә нигеҙләнеп, Лениндең ярыш тураһындағы идеяларын артабан йәйелдереп, социалистик ярышҡа классик рәүештә фәнни билдәләү бирҙе. «...Ярыш, — тип әйтә иптәш Сталин, — миллионлаған хеҙмәтсән массаларҙың максималь **активлеге** нигеҙендә **социализм төҙөүҙең коммунистик методы ул...** Ул шундай **рычаг,** эшселәр синыфы был рычаг ярҙамында илдең бөтә хужалыҡ һәм культура тормошон социализм базаһында үҙгәртеп төҙөргә тапҡырлаған... Социалистик ярыш — массаларҙың эшлекле революцион **үҙ-үҙенә тәнҡитенең** — миллионлаған хеҙмәтсәндәрҙең ижади **инициативаһына** таяныусы үҙ-үҙенә тәнҡиттең ҡеүәтләнеше ул» (Әҫәрҙәр, 12 том, 109—110-сы биттәр).

Иптәш Сталин стахановсыларҙың беренсе Бөтә Союз кәңәшмәһендә яһаған тарихи сығышында стахановсылар хәрәкәтенә тәрән фәнни билдәләү бирҙе, стахановсылар хәрәкәтенең тамырҙарын асып һалды һәм илебеҙҙә коммунизм төҙөүҙең эшләүсе өсөн бөйөк әһәмиәтен күрһәтте. Стахановсылар хәрәкәте, ти иптәш Сталин, «беҙҙең индустриябыҙҙың киләсәге булып тора, унда эшселәр синыфының киләсәктәге культура-техник күтәрелешенең орлоғо бар, ул беҙгә шундай юлды аса, тик шул юл менән барғанда ғына хеҙмәт етештереүсәнлегенең социализмдан коммунизмға күсеү өсөн һәм аҡыл хеҙмәте менән физик хеҙмәт араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡты бөтөрөү өсөн кәрәк булған юғары күрһәткестәренә ирешергә мөмкин» («Ленинизм мәсьәләләре», 496-сы бит).

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында социалистик ярыш, стахановсылар хәрәкәте тулҡыны бығаса күрелмәгән рәүештә йәйелде.

1946 йылда иптәш Сталин үҙенең беренсе май приказында, совет халҡына мөрәжәғәт итеп, «совет кешеләре, коммунистар партияһы етәкселегендә яңы биш йыллыҡты үтәү өсөн генә түгел, бәлки уны арттырып үтәү өсөн дә көстәрен аямаҫтар» тип ышаныс белдерҙе. Юлбашсының саҡырыуына яуап итеп, илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре коммунистар партияһы етәкселегендә һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты үтәү һәм арттырып үтәү өсөн бөтә халыҡ социалистик ярышы йәйелдерҙеләр. Ярыш промышленность хеҙмәтсәндәренең 90 проценттан күберәген солғап алды, колхоз крәҫтиәндәре араһында киң рәүештә йәйелде. Фәнни һәм инженер-техник работниктар ҙа ярышта массовый рәүештә ҡатнашлыҡ иттеләр, улар производство работниктары менән тығыҙ ижади хеҙмәттәшлек алып баралар.

Ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәренең хеҙмәт етештереүсәнлеген ныҡлы күтәреүгә булған ынтылыштары социалистик ярыш йөкмәткеһендә төп нәмә булып тора, сөнки ул, «...аҙаҡ сиктә, яңы общественный ҡоролоштоң еңеүе өсөн иң мөһим, иң төп нәмә» тип күрһәтте Ленин. (Әҫәрҙәр, 29 том, 394-се бит).

Большевиктар партияһы совет халҡының, ярышта ҡатнашыусыларҙың, стахановсыларҙың һәм инженер-техник работниктарҙың, фән эшмәкәрҙәренең һәм колхоз баҫыуҙары работниктарының ижади тырышлыҡтарын общественный хеҙмәттең етештереүсәнлеген систематик рәүештә күтәреү, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү, сырьё, материал һәм инструменттарҙы экономия менән тотоу, техник прогресты артабан үҫтереү һәм яңы техниканы тулы файҙаланыу бурыстарын хәл итеүгә йүнәлдереп килде һәм килә.

Коммунизм төҙөүҙең бөйөк бурыстары, Ленин—Сталин партияһының рухландырыусы һәм ойоштороусы көсө Советтар Союзы хеҙмәтсәндәрендә бығаса күрелмәгән общественный-политик активлек һәм производство активлеге тыуҙырҙы, социалистик ярыштың күп төрлө формаларын килтереп сығарҙы.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ заданиеларын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн Бөтә Союз социалистик ярышын Ленин ҡалаһының эшселәре һәм инженер-техник работниктары башлап ебәрҙеләр. Ленинградлыларҙың патриотик башланғысы промышленностең бөтә тармаҡтары предприятиеларының хеҙмәтсәндәре тарафынан шунда уҡ хуплап ҡаршы алынды. Бер үк ваҡытта Краснодар крайы, «Комсомолец» ауыл хужалығы артеле колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының инициативаһы буйынса орлоҡ етештереүҙең биш йыллыҡ планын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәренең Бөтә Союз социалистик ярышы йәйелеп китте.

Социалистик ярыш үҙенең тәбиғәте буйынса бер ҡасан да бер урында ғына тормай, ә өҙлөкһөҙ рәүештә йәйелә бара, миллионлаған хеҙмәтсән массаларҙың ижади инициативаһы менән тыуған яңы йөкмәтке менән байып тора. Социалистик ярышҡа хәрәкәтһеҙлек, ҡәнәғәтлек, йәбешеп ятыусылыҡ — ят нәмә, ул формализмға һәм шаблонға түҙеп тора алмай. Социалистик ярыш — мәңге яңы революцион процесс ул, үҙ юлында бөтә һәм һәр төрлө тотҡарлыҡтарҙы ватыусы халыҡ ижадының, хеҙмәт ынтылыштары һәм батырлыҡтарының тыйылғыһыҙ ҡеүәтле ташҡыны ул.

Совет государствоһы үҫешенең һәр бер тарихи этабында социалистик ярыш элек булған социалистик ярыштан сифат яғынан айырмалы булып килде, уға тарафында күберәк бай эстәлекле булды, торған һайын яңынан-яңы формалар алып килде.

Һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллыҡтың данлыҡлы стахановсыларының— Василий Матросов, Мария Волкова, Николай Российский, Валентина Хрисанова, Нина Назарова, Лидия Корабельникова, Генрих Борткевич, Павел Быков, Александр Чутких, Владимир Ворошин, хоросхойоусыларҙан Субботин, Чесняков һәм Михайлов, шахтер Валигура, инженер Федор Ковалев һәм Ленин — Сталин партияһы тарафынан тәрбиәләнеп килгән башҡа бик күп производство новаторҙарының, Тыуған илебеҙҙең тоғро патриоттарының исемдәре бөтә Совет иленә һәм сит илдәргә лә билдәле.

1946 йылда «Париж Коммунаһы» фабрикаһы стахановсыһы, хәҙерге Сталин премияһы лауреаты Василий Матросовтың инициативаһы буйынса производствоға хеҙмәттең стахановсы методтарын планлы рәүештә индереү өсөн киң хәрәкәт күтәрелгәйне. Бер йылдан һуң, 1947 йылдың июнендә, производствоның икенсе бер данлы новаторы, хәҙерге Сталин премияһы лауреаты, Мәскәүҙәге «Калибр» заводының мастеры Николай Российский, Матросовтың инициативаһын инженер иптәш Коренцова менән берлектә, дауам итеп һәм үҫтереп, коллектив менән стахановса эшләү идеяһын илдә беренсе булып үҙ участкаһында тормошҡа ашырҙы. Николай Российскийҙең патриотик башланғысы илдең бөтә предприятиеларында хуплап ҡаршы алынды, коллектив менән стахановса эшләүҙе ойоштороу өсөн ярыш промышленностең бөтә тармаҡтарына таралды һәм һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда социалистик ярыштың күренекле үҙгәлектәренән береһе булып торҙо. Хәҙер илебеҙҙә коллектив стахановса хеҙмәткә күскән унлаған предприятие һәм меңләгән цех иҫәпләнә.

Ләкин Матросовтың инициативаһының үҫеше быны менән генә туҡталып ҡалманы. 1950 йылдың йәйендә коммунист-инженер, хәҙер «Пролетарская победа» фабрикаһының директоры, Сталин премияһы лауреаты Федор Ковалев алдынғы стахановса эш алымдарын массовый рәүештә производствоға индереүҙе эшләп сығарҙы һәм уны үҙе эшләгән предприятиела ҡулланды. Уның методы шунан тора: һәр бер стахановсының эшендә иң һөҙөмтәле алымдары ғына алына, уларҙың тәжрибәһе дөйөмләштерелә, ә унан ары ул массовый рәүештә производствоға индерелә.

Инженер Ковалевтың методы реаль мөмкинлектәрҙе асҡан, бөтә эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеген ҡырҡа рәүештә күтәреү өсөн конкрет юл күрһәтә. Уның патриотик башланғысының бик ҙур әһәмиәте ошонда. Хәҙерге ваҡытта Ковалев методы буйынса стахановса эштең алдынғы, күберәк һөҙөмтәле алымдарын өйрәнеү һәм уларҙы производствоға индереү илебеҙҙә промышленностең бөтә тармаҡтарында киң ҡулланыла. Мәҫәлән, Ленинградтағы Киров исемендәге заводта комплекслы 70 бригада 563 стахановсы-новаторҙың тәжрибәһен өйрәнеү һәм уны таратыу эшен алып бара. Трактор цехында бригадаларҙың береһе, новаторҙарҙың тәжрибәһен таратып, хеҙмәт етештереүсәнлеген 20 процентҡа күтәреүгә ирешкән.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда тиҙләтелгән метод менән эшләүселәрҙең бығаса тигән хәрәкәте, илдең ике алдынғы стахановсыһы, Сталин премияһы лауреаттары — ленинградлы Г. Борткевич һәм мәскәүле П. Быков инициативаһы буйынса, металды тиҙләтелгән метод менән киҫеүгә эйә булыу өсөн күтәрелгән ярыш та артабан киңәйҙе.

Мәскәүҙәге «Красный пролетарий» заводының беренсе механика цехының өлкән механигы иптәш Белов металды тиҙләтелгән метод менән киҫеүҙә коллектив стахановса эш идеяһын 1949 йылда беренсе тапҡыр тормошҡа ашырҙы, үҙ участкаһында станоктарҙа эшләүсе бөтә эшселәрҙе тиҙләтелгән метод менән эшләүгә күсереүгә өлгәште, металл киҫеүҙә минутына 40—45 метрҙан 150 — 160 метрға тиклем еткерҙе. Белов үҙенең новаторлыҡ башланғысы өсөн лауреат исемен алыуға ирешә.

Хәҙерге ваҡытта тиҙләтелгән метод менән эшләү хәрәкәте массовый төҫ алды, промышленностең бөтә тармаҡтарына йәйелде. Был хәрәкәт токарлыҡ эше өлкәһенә генә таралыу менән ҡалманы, бәлки фрезеровщиктар, строгальщиктар, сверловщиктар, шлифовальщиктар араһына ла киң рәүештә таралды. Хәҙер инде тотош цехтар һәм предприятиелар тиҙләтелгән метод менән эшләүгә күсәләр. Мәҫәлән, «Красный пролетарий» заводында биш йыллыҡтың аҙағына бөтә төп механик цехтар металл киҫеүҙә тиҙләтелгән режимдарға күсерелделәр.

Тиҙләтелгән метод менән эшләүселәр хәрәкәтенең әһәмиәте хеҙмәт етештереүсәнлеген ҡырҡа күтәреүгә килтереүендә генә түгел, бәлки ул промышленностең тотош тармаҡтарын революционлаштырыусы, иҫке станоктарҙы һәм машиналарҙы камиллаштырыу һәм яңыларын булдырыу эшендә конструкторҙарҙы өҙлөкһөҙ рәүештә уйларға мәжбүр итеүсе серьез көс тә булып тора.

Быйыл Мәскәүҙәге станоктар төҙөү промышленносендә станокта эшләүселәрҙең 25 проценте, машиналар төҙөү һәм приборҙар төҙөү промышленносендә станокта эшләүселәрҙең 20 проценте һәм электр промышленносендә станокта эшләүселәрҙең 24 проценте металл киҫеүҙә тиҙләтелгән режимға күстеләр.

Краснохолмдағы камвольный комбинаттың мастер ярҙамсыһы А. Чутыхтың патриотик башланғысы ҙур хужалыҡ әһәмиәтенә эйә. А. Чутких продукцияны отличное сифатта эшләп сығарыу, «Отличное сифат бригадаһы» исеме өсөн ярыш башлап ебәреүсе булды. Был башланғыс, ә унан һуң Трехгорный мануфактура комбинаты мастер ярҙамсыһы В. Ворошиндең производствола хеҙмәттең юғары культураһы, таҙалыҡ һәм тәртип булдырыу өсөн күтәргән ярышы бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бөтә илгә таралды һәм социалистик предприятиеларҙа продукцияның сифатын һәм хеҙмәттең дөйөм культураһын күтәреү өсөн бөтә халыҡ хәрәкәте булып үҫте.

Ленин — Сталин партияһы хеҙмәтсәндәрҙең ҡиммәтле инициативаһын киң рәүештә таратыуҙы, хеҙмәт методтарындағы бөтә алдынғы һәм прогрессив нәмәне бөтә совет халҡының байлығы итеүҙе һәр ваҡытта үҙенең иң мөһим бурыстарынан береһе итеп һанап килде. Бына бер нисә миҫал.

1949 йылдың майында Мәскәү янындағы Купавинский йәҙек буҫтау эшләү фабрикаһының ике йәш эшсеһе Мария Рожнова һәм Лидия Кононенко сырьёға экономия яһау өсөн ярыш ойоштороуға тәҡдим иттеләр. Фабриканың партия ойошмаһы совет патриоткаларының тәҡдимен хуплап ҡаршы алды. Сырьёға экономия яһау өсөн булған был яңы гүзәл хәрәкәт бына шулай илеп тыуҙы һәм ул бик тиҙлек менән беҙҙең промышленностең бөтә предприятиеларына таралды, социалистик индустрияның бөтә тармаҡтарында үҙенә эйәреүселәрҙе тапты.

Купавинский туҡыусыларының инициативаһын йәйелдереп, башҡа ике бына тигән совет патриоты—Мәскәүҙәге «Париж Коммунаһы» фабрикаһы бригадиры Лидия Корабельникова һәм күн изделиеләре эшләү фабрикаһының өлкән мастеры Федор Кузнецов был башланғысты тағы ла конкретерак йөкмәтке менән байыҡтырҙылар. Улар үҙҙәре эшләгән предприятиеларҙа сырьёға комплекслы экономия яһау, бөтә фабрикала экономия яһалған сырьё менән айына кәмендә бер көн эшләү өсөн ярыш ойошторҙолар.

Лидия Корабельникованың гүзәл инициативаһы тураһындағы хәбәр илгә таралып та өлгөрмәне, Ленинградтағы «Скороход» фабрикаһының икенсе бер стахановка патриоткаһы Ольга Муштукова экономия яһалған материал менән айына бер көн генә түгел, ә ике көн эшләү тураһында үҙ бригадаһы менән йөкләмә алды.

Һәм илдең данлы патриоттары үҙҙәренең был йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр һәм арттырып үтәйҙәр. Лидия Корабельникова һәм Ольга Муштукова Сталин премияһы лауреаты исемен алыуға ирештеләр.

Дотацияһыҙ эшләү, зарарһыҙ эшләү, пландан тыш накопление булдырыу өсөн, ә унан һуңғыраҡ оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү өсөн 1948 йылда Мәскәүҙең алдынғы предприятиеларының инициативаһы буйынса башланған ярыш һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында киң рәүештә йәйелде.

Бынан бер йыл үткәс уҡ, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 32 йыллығы тураһында яһаған докладында иптәш Маленков, был патриотик ярышҡа баһа биреп, былай тине: «Пландан тыш накоплениелар булдырыу өсөн үткән йыл алдынғы эшселәрҙең башлауы буйынса йәйелеп киткән патриотик халыҡ хәрәкәте ҙур һөҙөмтәләр бирҙе. Яһалған экономия иҫәбенә промышленность егерме миллиард һумдан артығыраҡ өҫтәмә продукция эшләп сығарҙы».

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осорондағы социалистик ярыштың характерлы үҙгәлектәренән береһе — фән кешеләренең производство менән ижади хеҙмәттәшлеге ул, был Ленинградта башланып китте. Фән деятелдәре практика тәжрибәһе менән байыйҙар, производство работниктары ғалимдарҙан бик ҡиммәтле кәңәштәр һәм практик ярҙам алалар. Аҡыл хеҙмәте менән физик хеҙмәт кешеләренең ижади хеҙмәттәшлеге техник прогрестың бик мөһим бурыстарын хәл итеүгә, хеҙмәт етештереүсәнлеген тайпылышһыҙ күтәреүгә йүнәлдерелгән. Был — илебеҙҙә алдынғы фән үҫә икәнлегенең, уның «халыҡтан киртәләнмәй, үҙен халыҡтан алыҫ тотмай, ә халыҡҡа хеҙмәт итергә әҙер, фәндең бөтә ҡаҙаныштарын халыҡҡа бирергә әҙер, халыҡҡа мәжбүр ителеү буйынса түгел, ә ихтыярлы рәүештә, үҙе теләп хеҙмәт күрһәтә» (Сталин) икәнлегенең бик асыҡ шаһите.

Ленин — Сталин тарафынан тәрбиәләнгән, бөтә тамырҙары аша эшселәр синыфы һәм крәҫтиәндәр менән бәйләнгән, капитал иҙеүенән азат булған хеҙмәтсән совет интеллигенцияһы Тыуған илдең бәхете һәм сәскә атыуы өсөн үҙенең бөтә көсөн бирә, намыҫ менән һәм үҙ-үҙен аямай халыҡҡа хеҙмәт итә, уның менән берләп коммунизм төҙөй.

Мәҫәлән, Ленинград предприятиеларында 1950 йылда 33.420 эшсе, 14.695 инженер һәм техник, фәнни-тикшеренеү институттарының 4.495 работнигы, 960 ғалим тығыҙ ижади хеҙмәттәшлектә эшләгәндәр. Ленинградтағы Калинин исемендәге Политехника институтының 82 кафедраһынан 1950 йылда ижади хеҙмәттәшлектә 73 кафедра ҡатнашҡан. Институт ижади хеҙмәттәшлек тураһында 126 договор төҙөшкән. Институт 1949 йылдағы 62 эш урынына 181 эш үтәгән.

Һуғыштан һуңғы сталинсе беренсе биш йыллыҡтың уңышлы үтәлеүе һәм арттырып үтәлеүе — совет халҡының бөйөк еңеүе ул. Был еңеүҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы — бөйөк Ленин — Сталин партияһы, уның гениаль юлбашсыһы һәм уҡытыусы иптәш Сталин. Партия совет кешеләренең бөтә тырышлыҡтарын берләштереп, дөйөм маҡсатҡа — бөтә халыҡ социалистик ярышы ойоштороу аша биш йыллыҡ планды үтәүгә һәм арттырып үтәүгә йүнәлдерҙе. Совет халҡының бөтә донъя әһәмиәтле тарихи еңеүе — ленинизм идеяларының бик бөйөк триумфы ул.

Биш йыллыҡ планды үтәлеш йомғаҡтары күп миллионлы совет халҡы араһында бығаса күрелмәгән яңы хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Тыуған илдең байлығын артабан арттырыуға гүзәл патриотик ынтылыш менән солғап алынған совет кешеләре коммунизм төҙөлөшөнөң бөйөк сталинсе планын — донъяла бығаса күрелмәгән яңы гидроэлектростанциялар, каналдар, ер һуғарыу системалары төҙөлөштәрендә күҙаллаған планды ғәмәлгә ашырыу өҫтөндә үҙ-үҙҙәрен аямай эшләйҙәр.

Коммунизм төҙөүҙең бөйөк сталинсе планы үтәлешенең уңышлы барышы совет кешеләренең йөрәктәрендә коммунизмдың ныҡлы аҙаға тиклем еңәсәгенә тағы ла ҙурыраҡ ышаныс урынлаштыра. Совет халҡының йөрәге беҙҙе еңеүҙән-еңеүгә алып барыусы бөйөк һәм һөйөклө иптәш Сталинға ҡайнар мөхәббәт һәм рәхмәт тойғолары менән тулы.

В. Горин.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партияның район конференцияһы ҡарарын үтәүҙә планлы эш алып барырға

Шаран районы партия ойошмаһының март айында булып үткән конференцияһы, райкомдың эшен ҡаты тәнҡитләп, булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн конкрет саралар күрһәтеп киткәйне. Ошо сараларҙы тормошҡа ашырыу өсөн ВКП(б)-ның район комитеты план буйынса даими эш алып бара.

Партия уҡыуҙарының сифатын күтәреү өсөн, райком түңәрәк һәм политик мәктәп етәкселәре, партияның төүге ойошма секретарҙары менән регуляр рәүештә семинар үткәрә. Был семинарҙарҙа методик күрһәтмәләрҙән тыш, квалификациялы лекциялар уҡыла, эш тәжрибәләре менән уртаҡлашыу ойошторола.

Һуңғы ваҡытта етәксе работниктар һәм специалистар семинарҙарҙа һәм колхозсылар араһында политик һәм фәнни популяр темаларға йыш ҡына докладтар яһай башланылар. Райком секретаре Г. Журавлев, бүлек мөдире Ғ. Ғилметдинов, Шаран урта мәктәбе директоры С. Семенец иптәштәр халыҡ араһында айырыуса күп булалар. Ерекле урта мәктәбенең рус теле уҡытыусыһы иптәш Мицнияров тел белемен өйрәнеүгә ҡарата лекциялар циклы уҡыны. Райком члены П. А. Королев Куйбышев исемендәге колхоздың һәр бер бригадаһында коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре хаҡында беседалар үткәрҙе. Был йәнле һәм йөкмәткеле беседаларҙы биш йөҙҙән артыҡ колхозсы тыңланы.

Был саралар ғына партия-политик эштең сифатын ҡырҡа яҡшырта алмай, әлбиттә. Шуның өсөн райком партияның һәр бер төүге ойошмаһының эшен тикшереп, яҡындан ярҙам итеү өсөн, үҙенең работниктарын төүге ойошмаларға беркетте. Беркетелгән иптәштәр ойошмаларҙа бер нисә көн булып, партия уҡыуҙары буйынса занятиелар үткәреүҙә, партия йыйылыштары үткәреүҙә ҡатнашалар. Агитаторҙар менән семинарҙар уҙғарыуҙа булышлыҡ итәләр.

Был эшлекле сараларҙың яҡшы һөҙөмтәләрен инде күп кенә партия ойошмаларында күрергә мөмкин. «Беренсе Май» колхозы партия ойошмаһы (секретаре Бакиров, түңәрәк етәксеһе Терегулова), «Яңы юл» колхозы партия ойошмаһы (секретаре Фәхретдинов, түңәрәк етәксеһе Хәбибетдинова) һәм «Юность» колхозы партия ойошмалары коммунистарының политик белем кимәлдәре һәм партия ойошмаһының эшендәге активлектәре күтәрелде. Был колхоздарҙағы коммунистар хеҙмәттә юғары өлгө күрһәтәләр, агитацион-массовый эштә актив ҡатнашалар, колхозсылар менән беседалар үткәрәләр, партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарын асыҡ үтәү өсөн көрәшәләр.

Массовый-политик эште дөрөҫ ойоштороу хужалыҡ кампанияларының уңышлы хәл итә. Был бигерәк тә әрләтелгән колхоздарҙа яҙғы сәсеү эше барған саҡта асыҡ күренде. «Беренсе Май» колхозында (председателе коммунист Ғәлләмов), «Яңы юл» (председателе коммунист Фәйзуллин), Пугачев исемендәге (председателе Бурцев, партия ойошмаһы секретаре Кокунин) колхоздарҙа яҙғы сәсеү тыҡыҙ срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәрелде. Хәҙер был колхоздарҙа пар һөрөү, мал аҙыҡтары әҙерләү, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәре киң йәйелдерелә.

Партия-политик эште хужалыҡ эштәре менән дөрөҫ бәйләп алып барыу һөҙөмтәһендә был колхоздар хужалыҡты нығытыу өлкәһендә күренекле уңыштарға өлгәштеләр. Хәҙер уларҙа төҙөлөш эштәре башланды. Келәттәр, орлоҡ киптергестәр, ферма биналары ремонтлана, яңы йорттар һалына.

Был колхоздарҙың партия ойошмалары үҙҙәренең эшендә партия йыйылыштарына ҙур иғтибар итәләр. Партия йыйылыштарында массовый-политик эштең торошо һәм уның хужалыҡ эштәренә булған йоғонтоһо тикшерелә, агитаторҙарҙың информациялары тыңланыла, партия ойошмаһының эш планы раҫлана, агитколлективтың эшенә юнәлеш бирелә. Агитаторҙар социалистик ярыш тураһында беседалар үткәрәләр, бригадалар араһындағы ярыш йөкләмәләренең үтәлешенә йомғаҡ яһап баралар. Был өлкәлә район газеталары ла партия ойошмаларына ҙур ярҙам күрһәтәләр. Улар Баталы районы менән төҙөлгән ярыш договорының үтәлешен яҡтыртып баралар.

Райком ошо көндәрҙә агитаторҙар, уҡыу йорто һәм клуб мөдирҙәре, стена газеталары редакторҙары менән ике көнлөк семинар үткәрәсәк. Бында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, мал аҙығы әҙерләү осоронда агитаторҙарҙың бурыстары мәсьәләһен ҡарау билдәләнде. Яҙғы сәсеү ваҡытында сығарылған стена газеталарының күргәҙмә ойошторола. Бындай семинар яҙғы баҫыу эштәре башланыр алдынан да бер тапҡыр үткәрелгәйне. Хәҙер ике семинар араһындағы эшкә йомғаҡ яһалыу, элекке семинарҙарҙа ҡуйылған бурыстарҙың үтәлеш һөҙөмтәһе тикшереләсәк.

Ошолар менән бер рәттән, район ВКП(б) Өлкә Комитетының һуңғы пленумы тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы үтәү өсөн күп кенә саралар билдәләне.

Райкомдың эшмәкәрлеге ошо ҙур бурыстарҙың үтәлешенә ҡарап баһалана.

Ғ. Ибраһимов,
ВКП(б) Шаран райкомы секретары.

Партия ойошмаларының мөһим бурысы

Кадрҙарға марксистик-ленинсе тәрбиә биреү партия ойошмаларының иң мөһим бурыстарынан береһе булып тора. ВКП(б)-ның Киров райкомы был мәсьәләгә быйыл бик серьез иғтибар бирҙе.

Быйыл уҡыу йылында түңәрәктәрҙә һәм политик мәктәптәрҙә, шулай уҡ үҙ алдарына 2800 коммунист большевизмдең теорияһын һәм тарихын өйрәнде. ВКП(б)-ның район комитеты һәм төүге ойошмалар занятиеларҙың идея йөкмәткеһенә, коммунистарҙың занятиеға йөрөүҙәренә һәм уларҙың әҙерләнеп килеүҙәренә, үҙ алдарына уҡыусыларҙың индивидуаль пландарын үтәүҙәренә ныҡлы контроль булдырҙылар. Һөҙөмтәлә уҡыуҙар планлы һәм ойошҡанлыҡ менән барҙы.

Хәҙер район партия ойошмаларында уҡыу йылын уңышлы тамамлау буйынса ҙур эш алып барыла. Йомғаҡлау занятиеларын ойошҡанлыҡ менән үткәреү мәсьәләһе пропагандистарҙың кәңәшмәләрендә, ВКП(б) райкомының бюроһында тикшерелде.

Беренсе йомғаҡлау занятиелары коммунистарҙың ныҡлы әҙерләнеүҙәрен, программа материалын тәрән үҙләштереүҙәрен күрһәтәләр. Связь управлениеһе партия ойошмаһында ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү буйынса түңәрәктең һәм политик мәктәптең тыңлаусылары йомғаҡлау занятиеһында актив ҡатнаштылар һәм үтелгән материалды яҡшы үҙләштереүҙәрен күрһәттеләр. Большевизмдең теорияһын һәм тарихын Якушенко, Ғабдрафиҡов, Шмигельский, Г. Иванова, Ф. Иванов, Ильдерханова һәм Ғиләжетдинова иптәштәр айырыуса яҡшы үҙләштереүҙәрен күрһәттеләр.

Өфөләге клиника больницаһының медицина работниктары йомғаҡлау занятиеларында яҡшы күрһәткестәр бирҙеләр. Пропагандист иптәш Булашова етәкселек иткән түңәрәктең бөтә тыңлаусылары ла партия тарихын һәм теорияһын яҡшы үҙләштергәндәр. Башҡа күп кенә ойошмаларҙа ла йомғаҡлау занятиелары матур һөҙөмтәләр бирҙе.

Шул уҡ ваҡытта айырым партия ойошмалары секретарҙарының йомғаҡлау занятиеларын үткәреүгә серьез ҡарамауҙары асыҡланды. Икенсе ҡала пищеторгында, тау оборудованиелары заводында тыңлаусылар занятиеға әҙерлекһеҙ килделәр һәм материалды яҡшы белмәүҙәрен күрһәттеләр.

ВКП(б) райкомының, төүге ойошмаларҙың бурысы йомғаҡлау занятиеларын һәм беседаларҙы юғары идея-теоретик кимәлдә үткәреүҙе тәьмин итеүҙән тора.

А. Бондарь,
ВКП(б)-ның Киров райкомы пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире.

ЯҠШЫ ҺӨҘӨМТӘЛӘР

Кушнаренко районында партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙар уңышлы тамамланды. Бөтә урында ла тиерлек йомғаҡлау занятиелары коммунистарҙың политик яҡтан байтаҡ үҫеүҙәрен, большевизмдең теорияһын һәм тарихын өйрәнеү өҫтөндә ныҡ эшләүҙәрен күрһәтте.

Сталин исемендәге колхозда йомғаҡлау занятиелары ҙур ойошҡанлыҡ менән, юғары идея теоретик кимәлдә үтте. «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәге үҙенең ике йыллыҡ эшенә йомғаҡ яһаны. Түңәрәктең тыңлаусыларынан Насиров, Мосабиров, Гәрәев, Мөхәмәтйәнов һәм Хәбиров иптәштәр үтелгән материалды айырыуса яҡшы үҙләштереүҙәрен күрһәттеләр. Пропагандист иптәш Ғәлләмов занятиене методик яҡтан дөрөҫ, тыңлаусылар үҙ фекерҙәрен иркен әйтеп бирә алырлыҡ итеп үткәрҙе.

«Урал» колхозы партия ойошмаһында ла ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү түңәрәге уңышлы эшләне. Һөҙөмтәлә уҡыу программаһы срогында үтәлде. Йомғаҡлау занятиеһе яҡшы һөҙөмтә бирҙе. «Правда» колхозында партия тарихын өйрәнеү буйынса юғары типтағы түңәрәктең тыңлаусылары марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен өйрәнеү өҫтөндә ныҡышмалы эшләүҙәрен күрһәттеләр.

Х. Йосопов.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Агитацион эш алып барылмаған урында"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 99-сы номерында Плеш районы Ленин исемендәге колхозда агитацион-массовый эш алып барылмауы, шуның арҡаһында яҙғы сәсеүҙең оҙаҡҡа һуҙылыуы һәм башҡарылған эштең сифаты түбән булыуы тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Плеш район комитеты редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Агитацион эш алып барылмаған урында» тигән темаға «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған хәбәрҙә күрһәтелгән етешһеҙлектәр бик урынлы тип табылды. ВКП(б) район комитеты бюроһы хәбәрҙә күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү маҡсатында партияның Ленин исемендәге колхоз эргәһендәге төүге ойошмаһы секретарының отчетын тыңланы һәм уға агитацион-массовый эште йәйелдереүҙә практик ярҙам күрһәтеү өсөн райкомдың бер инструкторын беркетергә, тигән ҡарар ҡабул итте».

Башҡортостан нефтселәре! Иптәш Сталингә биргән вәғәҙәне намыҫ менән үтәйек!

Ярышта алдынғылыҡ өсөн

«Туймазынефть» трестының беренсе номерле промыслаһының 2-се участкаһы Азербайжан республикаһы «Сталиннефть» трестының 6-сы номерле промыселының 1-се участкаһы менән ярыша.

Беҙҙең 2-се участка коллективы, алған күтәренке йөкләмәләрҙе үтәү юлында намыҫ менән көрәшеп, байтаҡ ҡына уңыштарға өлгәште.

Беҙ хәҙер үҙ производствобыҙҙа алдынғы техника индерәбеҙ, алдынғы хеҙмәт методтарын киң ҡулланып эшләйбеҙ. Ошонан арҡаһында, хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде, беҙ пландарҙы артығы менән үтәйбеҙ. Операторҙар эшен үҫтерәләр.

Участкалағы скважиналарҙа электр лебёдкалары ҡулланыла, нефтте меркаптарҙан автоматик һуҙғыс ярҙамында алыу, штуцерҙарҙе ике минут эсендә тазартыу эшлеге һәм башҡа камиллаштырыуҙар беҙ операторҙарға 5-6 скважина хеҙмәтләндереүгә мөмкинлек бирҙеләр. Һөҙөмтәлә беҙҙең участкала 16 оператор эштән бушатылды һәм икенсе участкаларға эшкә күсерелде.

Алдынғы операторҙарҙың артта ҡалыусыларҙы шефлыҡҡа алыуы киң йәйелдерелде. Мәҫәлән, стахановсы оператор Демина Устинов, Сагыкова һәм Зайнетдинов иптәштәрҙе шефлыҡҡа алып, уларға стахановсылар сафына баҫырға ярҙам итте.

Хәҙер беҙҙең 1-се номерле промыселала тулыһынса стахановсы участкалар бар. Беҙҙең промысла тотошо менән стахановсы промысла булыу өсөн көрәшкә алынды.

Октябрьский нефтселәре икенсе йыл инде Азербайжан нефтселәре менән ярыша. Быйыл за социалистик ярышта алдынғы сафта барырға бөтә мөмкинлектәр бар. Беҙ уларҙы тулыһынса файҙаланыу өсөн көрәшәбеҙ. Октябрьский нефтселәренең нефть өсөн бөтә көрәше бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталингә биргән вәғәҙәне срогынан алда үтәүгә һәм Тыуған илебеҙгә пландан тыш күберәк нефть биреүгә, коммунизм төҙөү эшенә вклад индереүгә юнәлдерелгән.

Л. Терпанцева,
«Туймазынефть» трестының 1-се номерле промыслаһында 2-се участка мастеры.

Башҡортостан нефтселәре үҙҙәренең иптәш Сталингә яҙған хатында быйыл нефть сығарыуҙы, үҙған йыл менән сағыштырғанда, 22,4 процентҡа арттырырға һәм пландан тыш 100 мең тонна нефть бирергә, бораулау темпын үҫтерергә йөкләмәләр алдылар.

Ноябрь йөкләмәләр алып, Башҡортостан нефтселәре Азербайжан һәм Куйбышев өлкәһенең нефть промышленносы работниктарын социалистик ярышҡа саҡырҙылар.

Башҡортостан нефтселәре алған йөкләмәләрен үтәү өсөн һәрҙә намыҫ менән эшләйҙәр. Промыселдарҙа, нефть участкаларында, бораулау бригадаларында яңы уңыштар яулап алына.

Газетабыҙҙың бөгөнгө номерендә нефтселәрҙең иптәш Сталингә биргән вәғәҙәләренең үтәлеше барышы тураһында материалдар бирәбеҙ.

Техниканы тулы файҙаланыу өсөн көрәшәбеҙ

Мин үҙем хеҙмәтләндергән дүрт скважинаның эксплуатацияның коэффициенты 0,98-гә еткерҙем. Скважиналарҙың бушҡа тороуы бөтөнләй тиерлек бөтөрөлдө.

Фонтанлы әлеге скважиналарҙан тейешле нефть алыуҙы тәьмин итеү өсөн күп көс һалырға кәрәк. Ләкин, тәжрибә һәм бер нисә йыллыҡ эш күрһәтеүенсә, уларҙы эксплуатациялау яйын белгән кеше был эште еңел башҡара. Беҙҙең бурыс — скважинаның эшләгән фонтан режимын һаҡлау өсөн уларҙы дөрөҫ эшләтеү булды. Бының өсөн тейешле режимға иғтибар итергә, ә кәрәк булғанда, скважиналарҙы дөрөҫ эшләтеп ойоштороу зарур.

Был шуға ла беҙҙең промысла партия ойошмаһы техник уҡыуҙарҙы юлға һалып ебәрҙе. Унда бөтә операторҙар ҙа уҡыйҙар. Үҙеңдең эшеңде яҡшы белгәндә, скважиналарҙың оптималь режимда эшләүен ...

... тәү ауыр түгел.

Техник уҡыуҙар үҙ эшемде һәйбәтерәк белергә, беҙҙең 1-се номерле промыселдың ... бөтә операторҙары ла тиерлек стахановсылар. Мин үҙем көндәлек нормаһын 103 процентҡа үтәйем.

Беҙҙең промысла государство планын йылдан-йыл артығы менән үтәй. Алымдары йылдың дүрт айлыҡ программаһы артығы менән үтәлде. Тыуған ил менән дәүләтгә тонна ... нефть алды.

Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталингә биргән вәғәҙәһен үтәүгә, илебеҙҙә коммунизм төҙөүгә үҙ вкладыбыҙҙы бирәйек дыбыҙ буласаҡ.

Ғ. Рамазанов,
«Туймазынефть» трестының 1-се номерле промыслаһы операторы.

Беҙгә өлгәшелгән уңыштар сиҡ түгел

«Туймазынефть» трестының 3-сө номерле промыслаһы коллективы, Башҡортостан нефтселәре менән бергә һәйбәтле юлбашсыбыҙ иптәш Сталингә яҙған хатта йөкләмәләр алып, 1951 йылдың государство планын срогынан алда үтәргә һәм пландан тыш меңдәрсә тонна нефть бирергә һүҙ бирҙе. Социалистик ярышты киң йәйелдереп, беҙҙең промысла коллективы биш айлыҡ планды срогынан алда артығы менән үтәне.

Был уңыштарға етешерҙә өлгәшелде. Эшселәр участка работниктарҙың ... хеҙмәте үҙ, 1 квартал планы 106, дүрт айлыҡ план 110 процентҡа үтәлде. Государствоға беҙ пландан тыш бик күп «ҡара алтын» бирҙек.

Хеҙмәттең алдынғы методтарын ҡулланыу һәм производствоға яңы техника индереү участкаһы экономик күрһәткестәрен күтәреүгә мөмкинлек бирҙе. Нефттең үҙенә төшөү хаҡын кәметеү арҡаһында, 20 мең һум экономия яһалды, хеҙмәт етештереүсәнлеге 12 процентҡа күтәрелде.

Коллектив өлгәшелгән был уңыштарға ғына сиҡ түгел икәнен яҡшы белә. Нефть сығарыуҙы артабан күтәреү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Беҙ үҙебеҙгә алған йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәү, һәйбәтле Тыуған илебеҙгә күберәк нефть бирер өсөн бөтә көсөбөҙҙө бирәсәкбеҙ.

Б. Гирфанов,
«Туймазынефть» трестының 3-сө номерле промыслаһы мастеры.

Нефть сығарыу участкаларында хужалыҡ иҫәбе

Нефть промыселдарында государство планын үтәүҙе яҡшы эшләүҙе алғыш ... бригадалар һәм участкаларҙа ғына түгел, ә бөтә коллективтың юғары етештереүсәнлекле эшләүе хәл итә. Шуға күрә производство планын үтәү буйынса бөтә вак звеноларға бер тигеҙ бурыстар йөкмәтелә.

Беҙҙең промысла коллективы, 1950 йылдың III кварталында социалистик ярышта беренсе урынды алып, СССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙенең ҡулында тотоп килде. Коллектив быйылда I кварталда уңыш яулап алды. Был уңыштарға ул государство планын срогынан алда үтәү һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн көрәште киң йәйелдереү һөҙөмтәһендә өлгәште. Бындай уңыштарҙы яулап алыуҙа былардан башҡа шулай уҡ коллективтың хужалыҡ иҫәбендә эшләүе лә ҙур роль уйнаны.

Ләкин хужалыҡ иҫәбендә эшләү коллективҡа күп кенә ыңғай һөҙөмтәләр бирһә лә, эш практикаһы был өлкәлә беҙҙә етешһеҙлектәр булыуын да күрһәтте. Бындай хәл, әлбиттә, үҙенән-үҙе билдәле, участкаларҙа һәм ярҙамсы цехтарҙа хужалыҡ иҫәбенең камиллаштерелгән системаһын индереүҙе талап итте. Беҙ быны шулай эшләнек тә.

Трест ярҙамы арҡаһында индерелгән хужалыҡ иҫәбенең яңы системаһы нефть сығарыусы участкаларҙа 1 тонна нефттең үҙенә төшөү хаҡын иҫәпләү һәм эшкә контроль булдырыу ғына түгел, ә башҡа ярҙамсы цехтарҙың эштәренә лә тулы контроль булдырырға ярҙам итте. Беҙ апрель айында промысла буйынса продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙән генә 20 мең һум экономия, ә бригадалар буйынса 76 мең һум экономия алдыҡ.

Бик күп участкалар, элеккегә ҡарағанда, ҙур уңышлыҡтар менән эшләй башланылар. Ләкин бындай һөҙөмтәләр менән бер рәттән, ҡайһы бер ярҙамсы цехтарҙа етешһеҙлектәр ҙә бар. Скважиналарҙы ремонтлау бригадаларының ... эшен ... күрһә, ә ... һыйыныҡ, ошо ... айында 22 мең һум эшен күрһә, ә был башынан бирле уның зыяны, планға ҡарағанда, 69 мең һум тәшкил итә. Шулай уҡ промыселдың башҡа тармаҡтары буйынса ла расходтар бар әле. Былар промысла етәкселәренә етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса тейешле саралар ҙы бөтөрөү өсөн сигнал булып торалар. Был маҡсатта цех начальниктәре һәм коллективтәре алдына тракторҙарҙы һәм автомашиналарҙы дөрөҫ файҙаланыуҙы яҡшыртыу һәм башҡа тармаҡтар буйынса күп кенә бурыстар ҡуйылды ла инде.

Әйтергә кәрәк, хужалыҡ иҫәбенең яңы системаһы коллективҡа бик күп нәмәгә өйрәтте. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын артабан кәметеү өсөн көрәш хәҙер яңынан-яңы форма ала бара. Металды экономиялау өсөн мастер иптәш Завьялов станок-качалканың кривошип бармаҡтарындағы металл ҡалдыҡтарҙы атаҫ ҡалыптар менән алмаштырҙы. Шулай уҡ ул, майлау материалдарын аҙ расходлау ниәтендә, станок-качалкаларҙағы шатунҙарҙың өҫкө һәм аҫҡы осһарын майлау өсөн махсус автоматик масленкалар ҡуллана.

Экономия яһау, эске резервтарҙы файҙаланыу өсөн көрәшеүселәр беҙҙә хәҙер күп. Ярҙамсы материалдарҙы экономиялау өсөн хәрәкәт киңәйҙе. Быларҙың бөтәһе лә государство программаһын, Башҡортостан нефтселәренең һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталингә яҙған хатында алынған йөкләмәләрҙе срогынан алда үтәүгә һәм Бөтә Союз социалистик ярышында еңеүсе булып сығыуға йүнәлдерелгән. Беҙҙә хәҙер быға бөтә ышаныстар бар.

И. Смаков,
«Туймазынефть» трестының беренсе номерле промыслаһы баш бухгалтеры.

Юғары сифатлы продукция

Мин етәксе иткән комсомолец-йәштәрҙән торған токарҙар бригадаһы һуңғы ике йыл эсендә «Отлично сифат бригадаһы» исемен үҙенең ҡулында тота. Илебеҙҙә киң йәйелдерелгән яңы башланғыс — иптәш Ковалев методын газеталарҙан уҡығас, ул беҙҙе бик ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Ковалев методы фәнгә нигеҙләнгән. Уны производствоға индереү массовый характер алырға тейеш. Хәҙерге заман производствоһы шуны талап итә.

Ковалев методын индереү һәм ҡулланыу беҙҙең цехта хеҙмәт етештереүсәнлеген байтаҡ арттырҙы. Токарный станокта нығытыусы болтты ҡырып эшләү буйынса иптәш Скворцованың эш алымын беҙ бөтә токарҙар менән өйрәндек. Ул, был болттарҙы етештергәндә, уларҙың һәр береһенә ике-өс минут ваҡытҡа экономия яһай.

Тракторҙың гусеницаларын бер-береһе менән бәйләүсе бармаҡтарҙы эшләү буйынса минең эш алымыма күҙәтеү үткәрелде һәм ул башҡа токарҙарға таратылды. Трактор гусеницаһының түбәнгә каткаларының шайбаларын эшләү буйынса Ковалев методын ҡулланыу хеҙмәт етештереүсәнлеген 44 процентҡа күтәрергә мөмкинлек бирҙе. Бригада члендары Подшивалова, Кострюкова һәм башҡа иптәштәр токарный станокта ҡайһы бер деталдәрҙе эшкәртеүҙе ике тапҡырға арттырҙылар.

Беҙҙең коллектив өлгәшелгән уңыштар менән ҡәнәғәтләнеп ҡалмай, ә инженер Ковалев методы буйынса алдынғы стахановсыларҙың эш алымдарын үҙләштереү өсөн көрәшә.

Б. Иванов,
«Ишимбайнефть» тресы тракторҙар конторы һының токарҙар цехы бригадиры.

Бораулау мастеры иптәш Алексеев етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы 280-се номерле скважинаны бораулағанда 32 көндә 1500 метр проходка бирҙе.

Һүрәттә: (һулдан уңға) бораулау мастеры Ф. Х. Алексеев, бораулаусы Ф. А. Кизим, бораулаусы ярҙамсыһы П. В. Цыганов.

А. Червинский фотоһы.

Производство күтәрелеше

Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталингә яҙған хатына ҡул ҡуйып, Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективы бөйөк юлбашсыға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн көрәште киң йәйелдереп ебәрҙе. Айлыҡ планды заводтың бөтә цехтары ла арттырып үтәнеләр. Пландан тыш миллионлаған һумлыҡ продукция бирелде. Начальниге иптәш Закиров булған цех коллективы үҙенең айлыҡ планын арттырып үтәп, 14 мең һумлыҡ реагентҡа экономия яһаны. Иптәш Щеголев начальник булған цехта күп кенә установкаларҙың коллективтәре бер ай эсендә экономияланған реагенттәр иҫәбенә эшләп көн эшләнеләр.

Нефть эшкәртеүселәр үҙҙәренең йөкләмәләрендә тонок нефть продукттары етештереү буйынса айлыҡ планды 4,5 процентҡа, нефтебитум эшләп сығарыу буйынса 10 процентҡа арттырып үтәүҙе, хеҙмәт етештереүсәнлеген 1 процентҡа арттырыуҙы, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 0,5 процентҡа кәметеүҙе, электр энергияһына, пар һәм реагентҡа 3 процент экономия яһауҙы бурыс итеп ҡуйғайнылар. Йөкләмә намыҫ менән үтәлә.

Нефть эшкәртеү заводында алдынғы технологик бригадаларҙан — Тюрин, Кузнецов, Боярченко, Мазур, Калинин, Әгләмов һәм башҡа иптәштәрҙең бригадалары хеҙмәттең яҡшы өлгөләрен күрһәтәләр.

Заводта рационализаторлыҡ хәрәкәтенә киң юл бирелгән. Эшселәрҙән, инженер-техник работниктарҙан йөҙҙән артыҡ рационализаторҙар ошо йылдың беренсе кварталында ғына 102 тәҡдим индерҙеләр. Шуларҙан 88 тәҡдимде тормошҡа ашырыу заводҡа 113 мең һум экономия бирҙе. Рационализаторҙарҙың ижад уңыштары производство күрһәткестәрен яҡшыртыуға ҙур вклад булып тора.

М. Мостафин.

«Туймазыбурнефть» тресы беренсе номерле бораулау контораһының долотолар цехы айлыҡ программаны һәр ваҡыт арттырып үтәй.

Һүрәттә: долотолар цехы начальнигы, Советтәр Союзы Геройы иптәш Ш. Ғәтиәтуллин (унда) һәм мастер иптәш М. Тәхбәтуллин ремонттан сыҡҡан долотоларҙы тикшерәләр.

Л. Якубов фотоһы.

Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү резервтәре

Башҡортостан нефтселәре үҙҙәренең иптәш Сталингә яҙған хатында:

«Беҙ продукция эшләп сығарыуҙы артабан арттырыу һәм капиталь төҙөлеш планын үтәү өсөн булған резервтарҙе тулыһынса файҙаланыуҙы 1951 йылдың иң мөһим бурыстарының береһе, тип иҫәпләйбеҙ.

Беҙ 1951 йылда планды һан яғынан үтәү менән бергә, шулай уҡ яңы совет техникаһын тулыһынса файҙаланыуҙы төп бурыс итеп ҡуйбыҙ. Ошо нигеҙҙә, беҙ промышленность предприятиелары һәм төҙөлеш ойошмалары эшенең техник-экономик күрһәткестәрен ҡырҡа яҡшыртыуға өлгәшәсәкбеҙ», тип яҙҙылар.

Биш йыллыҡ планды срогынан алда уңышлы үтәлеүе менән рухланған Башҡортостан нефтселәре, партияның һәм хөкүмәттең даими хәстәрлегенә яуап итеп, үҙҙәре алған социалистик йөкләмәләрҙе һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталингә биргән вәғәҙәне срогынан алда үтәү өсөн социалистик Тыуған илебеҙгә фиҙакәр хеҙмәт итәләр.

«Башнефть» берекмәһенең бөтә предприятиеларында ла ныҡышмалы көрәш йәйелдерелгән. Был көрәш гүзәл һөҙөмтәләр бирә. СССР Нефть промышленносы предприятиеларының Бөтә Союз социалистик ярышының I квартал йомғаҡтары буйынса «Туймазынефть» трестының беренсе номерле промыслаһы коллективы беренсе урынды алды. Ул СССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алыуға өлгәште. Был социалистик ярышта шулай уҡ «Туймазынефть» трестының 5-се номерле промыслаһы һәм «Туймазыбурнефть» трестының трактор контораһы коллективтәре лә еңеүсе булып сыҡтылар.

Бораулаусылар ҙа ҙур ғына уңыштарға өлгәштеләр. 1951 йылдың апрель, май айҙарында бораулау планы арттырып үтәлде. Быйылғы дүрт айҙа, үткән йылғы шул уҡ айҙар менән сағыштырғанда, бораулау 38,3 процентҡа үҫте.

Башҡа нефтселәр кеүек үк, төҙөүселәр ҙә яҡшы күрһәткестәр бирҙеләр. «Башнефтепромстрой» трестының бөтә төҙөлеш-монтаж управлениелары төҙөлеш планын уңышлы үтәнеләр.

Был уңыштар үҫеш темпын артабан да ҡыҙыуыраҡ күтәреү өсөн яңынан-яңы резервтәр бар икәнен күрһәтәләр. Ләкин былар беҙгә бер генә минутҡа ла тынысланырға хоҡуҡ бирмәйҙәр әле.

Бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланыу өсөн ойоштороу-техник етәкселек кимәлен артабан күтәрергә, алған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәш ойоштороу юлы менән һәр бер промыселдың, бораулау контораһының, разведканың һәм төҙөлеш участкаһының планын үтәүгә өлгәшергә кәрәк.

Быны алдынғы, иң яҡшы техниканы индереү, күп эш талап иткән хеҙмәтте бөтә яҡлап механизациялаштырыу, кадрҙарҙың культура-техник кимәлен даими күтәреү һөҙөмтәһендә генә хәл итергә мөмкин.

Күренекле производство уңыштарына өлгәшкән алдынғыларҙың тәжрибәләре лә быны асыҡ күрһәтә. Мәҫәлән, бораулау мастеры иптәш Сидоренко ошо йылдың апрель айында проходка бирәү буйынса станок-айға, нормала күрһәтелгән 710 метр урынына, 1156 метр тиҙлек бирҙе. Был, Белянднюв, Куприянов иптәштәрҙең күрһәткестәренән дә юғары, тигән һүҙ.

«Туймазынефть» трестының 4-се номерле промыслаһы мастеры иптәш Ғиниәтуллин, участкала яңы техниканы киң ҡулланып, үҙған йылда ла һәм быйыл да нефть һәм газ сығарыу планын арттырып үтәп килә. Уның участкаһына нефтселәр союзының өлкә комитеты һәм «Башнефть» берекмәһе «Отлично сифатлы участка» исемен бирҙе.

Республикабыҙҙың нефть промыслаларында бындай участкалар, бригадалар күп. Улар Тыуған илебеҙгә коммунизм төҙөү эшенә вклад индерәләр.

Шуның менән бергә нефть сығарыуға, бораулау тиҙлеген күтәреүгә һәм капиталь төҙөлештәргә бирелгән средстволарҙы тулыһынса үҙләштереү өсөн байтаҡ ҡына эске резервтар ҙа бар әле. Тиҙәк, уларҙы халыҡ хужалығында тулыһынса хеҙмәт иттереү өсөн ҡыйыуыраҡ көрәшергә кәрәк.

Төп эске резервты файҙаланыу ул ҡеүәтле техниканы тулыһынса ҡулланыуға, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, эшсенең эш нормаһын үтәүгә хеҙмәт итә.

Ләкин, үкенескә ҡаршы, ҡайһы бер бораулау конторҙарында, уларҙың етәкселәренең ҡуҙғала алмауусанлыҡтары арҡаһында, ҙур ғына эске резервтар файҙаланылмай ҡалалар. Һөҙөмтәлә скважиналарҙы бораулау һуҙыла, эш темпы түбәнәйә һәм проходканың үҙенә төшөү хаҡы күтәрелә.

Проходка планын үтәү һәм бораулау эштәренең үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн авариялар һәм ойоштороу эштәре ваҡытында буш тороуҙар менән көрәш айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Быны аңлау өсөн I кварталда булған аварияларҙы күрһәтеү ҙә етә. Ошо авариялар арҡаһында ғына 15023 сәғәт ваҡыт әрәм булды. Аварияларҙың сәбәптәрен өйрәнеү — уларҙың, иғтибарһыҙлыҡтан килеп сыҡҡанын күрһәтә. Сөнки, тейешле иғтибар менән эшләгәндә, долотоларҙың һәм торбаларҙың ватылыуын алдан күреп, ваҡытында бөтөрөп булыр ине.

Ләкин ҡайһы бер бораулау предприятиеларында техник етәкселектең тейешле дәрәжәлә иғтибарлы булмауы, производствола техник дисциплинаны йомшартыу, авария яһаусыларға килешеп ҡарау күп һанлы авария ваҡиғаларын тыуҙыра. Был, государствоға ҙур зыян килтереүгә юл ҡуйыу, тигән һүҙ. 1951 йылда бораулаусылар алдына ҡуйылған бурыс авария яһаусылар менән ҡырҡа көрәшеүҙе талап итә.

Октябрьский шарттарында контурҙан һыу ебәреү нефть сығарыуҙы ике тапҡырға арттырырға һәм государствоға иҫке мәйҙандарҙан да ашыу реаль экономия бирергә мөмкинлек бирҙе.

«Туймазынефть» тресы предприятиеларының коллективтәре контурҙан һыу ебәреү объекттары төҙөлөшөн тамамлауҙы тәьмин итергә тейештәр. Нефть сығарыуға эшсе көсөнең удель расходын кәметеү талап ителә. Бының өсөн скважиналарҙы автомат ҡырғыстар, механизациялаштырылған лебёдкалар менән йыһазландырырға, трапҡарҙан нефтте һурып алыуҙы автоматлаштырырға, ер аҫты ремонтында күп эш талап итеүсе хеҙмәтте Молчанов һәм Спайдеров аппараттарын киң ҡулланыу юлы менән механизациялаштырырға кәрәк.

Беҙҙә государство программаларын арттырып үтәүсе коллективтар күп. Ошо уҡ ваҡытта эшселәрҙең ҡайһы бер өлөшө көндәлек, айлыҡ нормаларын үтәмәйҙәр әле. 1951 йылдың беренсе кварталында нефть сығарыусыларҙың уртаса норма үтәлеше 104 процент булды. Айырым алғанда, шуларҙың 20 проценты үҙ нормаларын үтәмәгәндәр. Бораулауҙа бындайҙар тағы ла күп кенә иҫәпләнә.

Разведка трестарында хеҙмәтте дөрөҫ ойошторолмауы күҙгә асыҡ бәрелә. Мәҫәлән, «Башзападнефтеразведка» тресында нормаларын үтәмәүселәр бөтә эшселәрҙең 59 процентын тәшкил итә.

«Ишимбайнефть», «Башзападнефтеразведка» трестарында сдельно эшләүселәр һаны бик түбән. Уларҙың етәкселәре сдельно түләүҙең эшләү системаһының практик әһәмиәтен аңлап еткермәйҙәр.

Эшләнгән эш хисабынан түләү хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуҙа ҡеүәтле фактор булыуын ҡайһы бер етәкселәр онотолар.

Эш ваҡытының дөйөм балансында өлөшкә тиклем ойоштороу ваҡытында юғалтыуҙар, буш тороуҙар күп. Тик ошо сәбәп менән генә бораулау конторҙарында алымдағы йылдың ес айында буш тороуҙарға 15 процент эш ваҡыты китте. Ҡышҡы шарттарҙа эшләүгә насар әҙерләнеү — бындай буш тороуҙарҙың төп сәбәбе. Беренсе кварталда «Башзападнефтеразведка» һәм «Башвостокнефтеразведка» трестарында буш тороуҙарҙың яртыһы тиерлек ошо сәбәптәрҙән булды. Был трестарҙың етәкселәре Потюкаев, Ефремов һәм Назаренко иптәштәрҙең хужалыҡ менән оператив етәкселек итмәүҙәре государствоға бик ҡиммәткә төштө.

Юғарыла күрһәтелгән фактар нефтселәрҙең ҙур резервтәре барлығы тураһында һөйләйҙәр. Шуға күрә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн эске резервтарҙы максималь мобилизовать итеү — беҙҙең иңге бурысыбыҙ.

Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә, машиналарҙы, механизмдарҙы, агрегаттарҙы файҙаланыуҙа техник-экономик нормаларҙы индереүҙең роле байтаҡ ҙур.

Шулай ҙа берекмәнең предприятиеларында механизацияны индереүҙә бер нәмә менән аңлатмаған аҡрынлыҡ күрһәтәләр. Мәҫәлән, «Башнефтепромстрой»ҙың беренсе номерле төҙөү-монтаж управлениеһының төҙөлеш майҙанында бульдозерҙар, бетон бутаусылар һәм башҡа төрлө механизмдар бар, ә эшселәр эштә ҡул көсө менән башҡаралар.

Техниканы былай файҙаланғанда хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү тураһында уйлау ҙа мөмкин түгел.

Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн көрәштә техник нормаларҙы яҡшыртыуға айырыуса иғтибар бирергә кәрәк. Был төңгәлдә ҙур ғына эштәр башҡарылған. Ләкин улар ғына мәсьәләне хәл итә алмай әле.

Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә ҡеүәтле фактор булып социалистик ярыш һәм стахановсылар хәрәкәте тора. Ярышта ҡатнашыусылар иптәш Сталин алдында алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәштә яңы, юғары етештереүсәнлекле эш методтары табырҙар, иҫке нормаларҙы ватып, алға китерҙәр.

Хужалыҡ етәкселәренең, инженер-техник работниктарҙың артабанғы бурысы, партия органдары етәкселегендә социалистик ярышты киң колас менән йәйеп ебәреүҙән һәм эшселәрҙең бөтә ижади мөмкинлектәрен үҫтереү өсөн кәрәкле, ыңғай шарттар булдырыуҙан тора.

Б. Әхмәров,
«Башнефть» берекмәһе начальнигенең урынбаҫары.

Башҡорт АССР-ы МТС-тарында комбайндар ремонтлауҙың барышы*)

(План үтәлеше, 1951 йылдың 10 июненә процентта).

Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған
1	Благовар	106	48	Услы	58	95	Поляяск	45
2	Дәүләкән	100	49	Ермаш	58	96	Ташлыкүл	44
3	Сынташтамаҡ	100	50	Дүртөйлө	57	97	Калмыҡ	43
4	Подгорный	100	51	Арслан	57	98	Бүрйән	43
5	Октябрьский	100	52	Күш йылға	57	99	Абзан	42
6	Янаул	100	53	Канура	57	100	Мәләүез	42
7	Карамалы Ғөбәй	94	54	Мияҡы	57	101	Шишмә	42
8	Ташлы	89	55	Белокатай	57	102	Бәрә	41
9	Янаул	88	56	Бәзән	56	103	Бурлы	41
10	Әбдрәш	82	57	Степановка	56	104	Балтач	41
11	Баймаҡ	82	58	Бишкурай	56	105	Малояз	41
12	Шағанбаш-алаз	80	59	Чураев	56	106	Сабай	40
13	Күлдәрәк	77	60	Асылы	56	107	Әлмөхәмәт	40
14	Теләкәй	75	61	Илъяйыр	56	108	Әбйәлил	40
15	Байгужа	75	62	Ількәр	56	109	Елдәр	40
16	Шиле	75	63	Үләй	55	110	Аксен	40
17	Шаран	73	64	Языково	55	111	Бакалы	40
18	Дуван	73	65	Мәсәгүт	55	112	Ирмот	40
19	Ряжан	73	66	Красноусолы	54	113	Подлуб	39
20	Барышман	72	67	Аркаулы	54	114	Пугачев	39
21	Суйыңыс	72	68	Бүгөрсен	54	115	Мрәсем	38
22	Ново-Троицк	72	69	Тукмаклы	53	116	Бары йүл	37
23	Борай	69	70	Михайловка	53	117	Сермән	37
24	Иглин	69	71	Бүзәй	52	118	Буздәк	37
25	Нарьпәй	69	72	Асылыкүл	52	119	Касәу	37
26	Салкмаруп	67	73	Нуримап	52	120	Ото Телә	36
27	Чишмә	67	74	Хәйбулла	51	121	Мәсетло	35
28	Мәләр	67	75	Усть-Икин	51	122	Баш	35
29	Федоровка	67	76	Андреевка	50	123	Стәрлебаш	35
30	Баран	67	77	Ерекле	50	124	Байкыз	35
31	Матрай	67	78	Тәтешле	50	125	Карым	34
32	Петровск	65	79	Бүран	50	126	Ерган	33
33	Кыйты	65	80	Дмитриевка	48	127	Шаран	33
34	Таймас	63	81	Буекүл	48	128	Әйдрпинт	32
35	Мрәс	63	82	Урниз	48	129	Охлебинин	31
36	Имзлде	62	83	Бураҡ	47	130	Усень-Ивановка	30
37	Кламинпков	60	84	Ермолаевка	47	131	Мишкә	30
38	Әрйәзе	60	85	Иәржкай	47	132	Белябай	30
39	Бохор	60	86	Хәйбулла	47	133	Орлов	28
40	Жорос	60	87	Пешегот	46	134	Янлы	28
41	Бишбүләк	60	88	Баймасоз	46	135	Карпеля	28
42	Бишәнде	60	89	Ярослав	46	136	Дыуан	25
43	Казаслы	59	90	Үзүлек	46	137	Учалы	25
44	Моторный	59	91	Кырмыскалы	45	138	Архангель	20
45	Степной	59	92	Иукайлы	45	139	Покровка	16
46	Туймазы	59	93	Стәрлетамаҡ	45	140	Забельск	13
47	Шланлы	58	94	Аит	45			

* * *

Республика МТС-тарында комбайндарҙы ремонтлау эше түбәнгеләй хәлдә тора.

Урожай йыйыуҙы башлауға [illegible] ҡалыуға ҡарамаҫтан, тик 6 МТС ҡына ремонтты тамамланы. Республикала әле 60 МТС үҙҙәрендәге комбайндарҙың яртыһын да ремонтламаған. Зәбеләк, Покровка, Архангель МТС-тары айырыуса арта ҡалалар. Уларҙа комбайндарҙың дүрттән бере генә ремонтланып бөткән.

Темптың түбән булыуы, башлыса, ремонт эштәрен ойоштороуҙың насар булыуынан тора. Күпселек МТС-тарҙа прогрессив эш методтары — сәғәт графигы буйынса эшләү, узловой метод ремонтта ҡулланылмай. Благовар районы Языково МТС-ы (директоры иптәш Дыбленко) ремонтты индивидуаль методта алып бара. Күпселек комбайнерҙар [illegible]. Шул арҡала был МТС-та [illegible] 20 комбайндың тик 5-се генә ремонтланған. Шишмә МТС-ында ла шундай уҡ хәл. Үҙ комбайнын ремонтлаған комбайнерҙар ауылдарына ҡайтарып ебәрелгәндәр. Өлө Тәләк МТС-ында 17 комбайнерҙың тик 6-һы ғына ремонтта ҡатнаша.

Күпселек МТС-тарҙа ремонтта [illegible]. Ә хәҙер комбайндарҙы ремонтлау [illegible].

Ваҡыт көтмәй. Һәр бер комбайн, һәр трактор, молотилка [illegible] ремонтты һәм унда хеҙмәтте ойоштороуға ныҡ иғтибар итергә, узловой методты ҡулланырға, бөтә комбайнерҙарҙы, ремонт эшселәрен эшкә туплашырға кәрәк.

ТЫНЫСЛЫК ПАКТЫ ӨСӨН!

Кытай халыҡ республикаһы. Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалар йыйыу буйынса кампания бөтә Кытайҙа киң йәйелдерелә. Тяньцзинь ҡалаһы халҡының 70 проценте артыҡыраҡы Мөрәжәғәткә ҡул ҡуйҙы инде.

Һүрәттә: Тяньцзинь урамдарының береһендә Мөрәжәғәткә ҡултамғалар йыйыу.

(ТАСС фотохроникаһы).

КЫТАЙ

ПЕКИН, 13 июнь. (ТАСС). Матбуғат хәбәрҙәренә ҡарағанда, биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Ҡытайҙа 11 июнгә тиклем 258.963.871 кеше; Японияны ҡоралландырыуға ҡаршы 258.715.809 кеше ҡул ҡуйған.

БОЛГАРИЯ

СОФИЯ, 13 июнь. (ТАСС). Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Болгарияла ҡултамғалар йыйыу дауам итә. Тыныслыҡты яҡлаусы Болгария милли комитетының белдереүенә ҡарағанда, 13 июнгә Мөрәжәғәткә ҡул ҡуйыусыларҙың һаны 5.630.000-дән дә артҡан, был, илдәге бөтә халыҡтың 80 проценте самаһын тәшкил итә.

Көнбайыш Германияла халыҡтан һорау алыу

БЕРЛИН, 13 июнь. (ТАСС). Көнбайыш Германияның бөтә урындарынан да килеүҙә дауам итеүсе хәбәрҙәр халыҡтан һорау алыуҙың уңышлы барыуын күрһәтәләр. Полиция терроруна ҡарамаҫтан, халыҡтан һорау алыу Көнбайыш Германияны ремилитаризациялауҙы туҡтатыуҙы һәм 1951 йылда Германия менән ярашыу договорын төҙөүҙе талап итеүсе Көнбайыш Германия халҡының асыҡ демонстрацияһына әйләнде.

Мәҫәлән, Көнбайыш Германияла 12 июнда 24 сәғәт эсендә һорау алынған 6.388 кешенең 5.873-ө, йәғни 91,7 проценте «һеҙ ремилитаризациялауға ҡаршымы, 1951 йылда ярашыу договорын төҙөү өсөн сығыш яһайһығыҙмы», тигән һорауға «эйе» тип яуап бирҙе. Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ошо 24 сәғәт эсендә Саар өлкәһендә һорау алынған 432 кешенең 411-е был һорауға ыңғай яуап бирҙе.

12 июнда 24 сәғәт эсендә Көнбайыш Берлинда 3258 кешенән һорау алынды. Уларҙың 2.875-е ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда Германия менән ярашыу договорын төҙөү өсөн сығыш яһаған.

Норвегияла һәм Финляндияла хәрби әҙерләнеүҙәр тураһында „Тюэкансан саномат“

ХЕЛЬСИНКИ, 13 июнь. (ТАСС). «Тюэкансан саномат» газетаһы үҙ хәбәрсеһенең Норвегияның Хаммерфест ҡалаһынан ебәргән хәбәрен баҫып сығарған. Хәбәрсе Норвегияның Финляндия менән сиктәш булған иң төньяҡ губирнаһы — Финмарк губирнаһында үткәрелә торған хәрби әҙерләнеүҙәр тураһында һөйләй.

Хәбәрсенең һүҙҙәренә ҡарағанда, был губирнаға танкылар, артиллерия, бронемашиналар һәм башҡа хәрби снаряжениелар тейәлгән судноларҙа өҙлөкһөҙ килеп торалар. Үткән һуғыш ваҡытында немецтәр һуңынан Финляндияға сығарыу һәм уны Финляндия аша Советтар Союзына ҡаршы хәрәкәт итеүсе ғәскәрҙәренә илтеү өсөн ошо уҡ урындарҙа үҙҙәренең хәрби снаряжениеләрен туплағайнылар, тип билдәләй хәбәрсе. Ул, урындағы халыҡ килеп тыуған хәл менән бик ныҡ тынысһыҙлана, тип билдәләй.

«Тюэкансан саномат» газетаһы икенсе бер хәбәрҙә, Скандинавия илдәрендәге хәрби әҙерлектәр Финляндияның үҙендә үткәрелгән хәрби әҙерлек менән тығыҙ бәйләнгәндәр, тип яҙа.

Газета Финляндияла мобилизацияға йәшерен алып барылған әҙерлек, транспорт средстволарына алып барылған иҫәп, пожарныйҙарҙы теркәү тураһында һөйләүсе яңы факттар килтерә.

«Тюэкансан саномат» газетаһы, һуғышҡа ошолай әҙерләнеү фин халҡы араһында тревога тыуҙыра, тип күрһәтә.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 13 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 13 июнда, Корея Халыҡ армияһының частары Ҡытай добровольцтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәттә, Америка-Англия интервенттарының ғәскәрҙәренең һәм лисынмансы ғәскәрҙәренең ныҡлы атакаларын бөтә фронттарҙа ла уңышлы кире ҡағып, 38-се параллелдән төньяҡтараҡ территорияла ҡаты һуғыштар алып барыуҙы дауам итәләр, тип хәбәр итте.

13 июнда дошман самолеттарын [illegible] төшөрөүсе уҡсылар дошмандың 3 самолетын атып төшөрҙөләр һәм Американың [illegible] чиһындағы бер летчигын пленгә алдылар.

Вьетнамда һуғыш хәрәкәттәре

ШАНХАЙ, 13 июнь. (ТАСС). Вьетнам информация агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Вьетнам Халыҡ армияһының главнокомандующийы генерал Во Нгуен Зиап, Нинь-Бинь районында армияның уңышлы хәрәкәт итеүенә ҡағылып, былай тип белдергән: «Нинь-Бинь уҙҙлыҡтар районында Халыҡ армияһы тарафынан азат ителгән беренсе ҡала булып тора. Дошман уны кире алырға маташасаҡ, ләкин ул, моғайын, юҡ ителер. Нинь-Бинь өсөн һуғыш ҙур еңеү булып тора. Фу-Ли менән Фат-Ди араһындағы районда алып барылған бөтә һуғыштар ҙа беҙҙең ғәскәрҙәребеҙҙең еңеүгә өлгәшеүҙәре ҙур иғтибарға лайыҡлы факт булып тора. Был, яңы подвигтар яһау эшендә ярышыусы беҙҙең ғәскәрҙәребеҙҙең юғары рухын [illegible] булып хеҙмәт итә...

Нинь-Бинь районында өлгәшелгән еңеүҙәр беҙҙең ғәскәрҙәребеҙҙең [illegible] райондарҙа булһын, шулай уҡ [illegible] яҡтарҙа ла дошманды юҡ итә алырын күрһәтәләр. Партизандар һуғышын стимуллаштырыу һөҙөмтәһендә [illegible] марионет административ машинаһы тар-мар ителде, армияға яңы ғына [illegible] ыусылар француз армияһынан дезертирлыҡ ителәр һәм ҙур группалар булып [illegible] армияһына ҡушылдылар, ә дошман [illegible] лындағы беҙҙең базаларыбыҙ [illegible] һәм киңәйҙеләр».

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһы комиссияһының пресс-конференцияһы

БЕРЛИН, 12 июнь. (ТАСС). Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһының (МДФЖ) Америка-Англия интервенттәренең йыртҡыслыҡтарын тикшереү маҡсатында Кореяға барған комиссияһы ағзалары ҡатнашлығында 12 июнда Германия демократик республикаһының информация ведомствоһында пресс-конференция булып үтте.

Пресс-конференцияла Германияның бөтә матбуғатының күп һандағы вәкилдәре һәм сит ил хәбәрселәре ҡатнашты.

Пресс-конференцияны асып ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһының секретаре Мари Гис ханым (Бельгия), 10 көн эсендә комиссия ағзалары Кореяның төрлө райондарында булдылар, унда граждандар халҡына һәм бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға һәм балаларға ҡарата Америка-Англия агрессорҙары һәм лисынмансы ғәскәрҙәр тарафынан яһалған йыртҡыслыҡтарҙың күп һандағы факттарын билдәләнеләр, тип хәбәр итте.

МДФЖ комиссияһының председателе Нора Родд ханым (Канада) матбуғат вәкилдәренә белдереү иғлан итте, унда былай тип әйтелә, Кореяла үҙҙәренең күҙәтеүҙәре һөҙөмтәһендә комиссия ағзалары түбәндәге һығымтаға килделәр:

Корея халҡы Америка интервенттәре тарафынан систематик, рәхимһеҙ юҡ ителә. Был, кешелек принциптарын, шулай уҡ һуғыш алып барыу ҡағиҙәләре тураһында Гаага һәм Женева халыҡ-ара конвенцияларында яҙылған халыҡ-ара принциптәрен тупаҫ боҙоуҙы күрһәтә.

Корея халҡын бөтөрөү туҡланыу продукттарын, фабрикаларҙы, баҫыуҙарҙы һәм плантацияларҙы, Кореяның тыныс ҡалаларын һәм ауылдарын систематик юҡ итеү юлы менән, ҡатын-ҡыҙҙарға һәм балаларға ҡаршы юҡ итеүҙең яндырыусы һәм напалм бомбалары кеүек иң [illegible] һеҙ средстволарын ҡулланыу юлы [illegible] үткәрелә.

Америка-Англия баҫҡынсылары [illegible] фынан ваҡытлыса оккупацияланған [illegible] рея территорияһында бер ниндәй [illegible] булмаған ундар меңләгән тыныс [illegible] ниндәй судһыҙ һәм тикшереүһеҙ [illegible] ҡыстарса юҡ ителгән. Корея [illegible] ҡарата был енәйәттәр өсөн яуаплы [illegible] генерал Макартурға, генерал Ридгуэйға һәм Кореяла һуғыш алып барырға [illegible] лыҡтарын биргән илдәрҙең хөкүмәттәренә төшергә тейеш. Кореяла яһалған енәйәттәр өсөн ғәйепле ҡаланған бөтә [illegible] хәрби енәйәтселәр, тип иғлан ителәр [illegible] уларға союзниктарҙың 1943 йылғы [illegible] ларацияһында билдәләнелгәнсә яза [illegible] лергә тейеш, тип иҫәпләй комиссия.

МДФЖ комиссияһы донъялағы [illegible] халыҡтарға Кореяла тыныс яйға [illegible] өсөн һәм интервенционистик ғәскәрҙәрҙең Кореянан сығарылыуы өсөн бөтә [illegible] эшләргә саҡырып мөрәжәғәт итә.

Комиссия ағзалары исеменән Нора Родд донъялағы бөтә халыҡтарҙы Америка-Англия интервенттәренең йыртҡыслыҡтарынан ҡаты ғазапланыусы Корея халҡына киҫекмәҫтән ярҙам ойошторорға саҡырҙы.

Комиссия ағзалары МДФЖ секретариатынан Америка-Англия интервенттәренең Кореялағы йыртҡыстары тураһында [illegible] ре тарафынан тапшырылған [illegible] Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы [illegible] нә, бөтә илдәрҙең хөкүмәттәренә, Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советына, ҡатын-ҡыҙҙарҙың бөтә ойошмаларына общественный һәм тынысылыҡ өсөн сығыш яһаусы башҡа ойошмаларға, шулай уҡ [illegible] общественносенең күренекле вәкилдәренә ебәреүҙе һораны.

Венгрияның иң яҡшы трактористкаларының һәм комбайнеркаларының кәңәшмәһе

БУДАПЕШТ, 11 июнь. (ТАСС). Венгрияның иң яҡшы трактористкаларының һәм комбайнеркаларының Будапештә кәңәшмәһе булып үтте.

МТС-тарҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙың эше тураһында доклад менән МТС управлениеһенең агитация һәм пропаганда бүлеге етәксеһе Юлия Ижак сығыш яһаны. Ул Венгрия МТС-тарының эшендә ҡатын-ҡыҙҙарҙың ролен билдәләне һәм ҡатын-ҡыҙҙар тракторҙарҙа һәм комбайндарҙа бик яҡшы эшләйҙәр, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды. Мәҫәлән, Секешфехервар МТС-ының трактористкаһы Илона Ач производство нормаларын 134 процентҡа, Мезе-Берень МТС-ының трактористкаһы Илона Сюч 132 процентҡа үтәй. МТС-тарҙа эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаны сағыштырмаса аҙ булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың 37-һе бригадир, 9-ы МТС директоры, 36-һы политбүлек буйынса урынбаҫар булып эшләй.

Венгрия хеҙмәтсәндәр партияһының генеральный секретаре Матиас Ракоши кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға ҡыҫҡа ҡотлау һүҙе менән мөрәжәғәт итте. Ракоши [illegible] ҡөслө овация менән ҡаршыланды. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар П. Н. Ангелинаға ҡотлау хаты ебәрҙеләр. Хатта Венгрия трактористкалары, совет ҡатын-ҡыҙҙарының героик өлгөһө беҙгә [illegible] юл күрһәтә, тип билдәләйҙәр. Венгрия халҡының юлбашсыһы Матиас Ракошиҙың мөрәжәғәтте трактористкалар үҙҙәренең ныҡышмалы эштәре, ағыулыҡҡа [illegible] мия яһауҙары һәм машиналарҙы [illegible] тәрбиәләүҙәре менән трактористкаларҙың авторитетын юғары тоторға, МТС-тарҙа эшкә ҡатын-ҡыҙҙарҙы күберәк [illegible] итергә һәм Ангелина өлгөһөнә [illegible] ҡатын-ҡыҙҙарҙан айырым бригадалар [illegible] зергә һүҙ бирҙеләр.

Редактор урынбаҫары: F. К. ЗӘЛКӘРНӘЕВ.

„КЫҘЫЛ БАШКОРТОСТАН“, „КРАСНАЯ БАШКИРИЯ“, „КЫҘЫЛ ТАҢ“, „ЛЕНИНЕЦ“, „ЛЕНИНСЕ“

газеталарына 1951 йылға подписка кабул итеү дауам итә.

Подписка „Союзпечать“тең ҡалаларҙағы бүлектәрендә, связь бүлектәрендә һәм агентстволарында, подписка ҡабул итеү пункттарында, шулай уҡ предприятиеләрҙә, учреждениеләрҙә, совхоздарҙа һәм колхоздарҙа подписка буйынса общественный уполномоченныйҙар тарафынан ҡабул ителә.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — «АҠБУҘАТ».

Кисе 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СПОРТ НАМЫҪЫ».

«Салауатта» — «КАЗАК ҒАЛОТАРАҺЫНДА УПҘАР».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа «ҠЫЙЫУ КЕШЕЛӘР».

«Иҙелдә» — «ДАЛАЛА».

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Орлоҡсолоҡ участкаларын тәрбиәләү

СССР Министрҙар Советенең һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетенең тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планы тураһындағы ҡарарында: «Сортлы орлоҡсолоҡ сәсеүлектәре майҙанын киңәйтеү менән бергә, уны ваҡытында дөрөҫ тәрбиәләп, юғары урожай алыуҙы тәьмин итергә», тип әйтелә.

Селекцион тәжрибә станцияларында, сорт-һынау участкаларында һәм колхоздарҙа күп йылдар буйы һайлауҙар, һынауҙар һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан һәм юғары урожай бирә торған орлоҡтар яҡшы сортлы булып иҫәпләнә. Бындай орлоҡ үҫемлектәре ҡоролоҡҡа һәм төрлө ауыл хужалығы ҡоротҡостарына ҡаршы сыҙамлы булалар, йыл һайын тотороҡло һәм юғары урожай бирәләр.

Былтыр Баҡалы районындағы сорт-һынау участкаһында сәселгән «Вятка» сортлы арыш һәр гектарҙан 26,8-әр центнер урожай бирҙе. Күгәрсен районы «Октябрь» колхозында сортһыҙ бойҙай гектарынан 11-әр центнер урожай бирһә, «Горделформе-010» сортлы бойҙай һәр гектарҙан 15,4-әр центнер, шул уҡ райондың «Красный колос» колхозында «Золотой дождь» сортлы һоло һәр гектарҙан 26,4-әр центнер урожай бирҙе. Өфө районы Фрунзе исемендәге колхозда үткән йыл «Ново Уренское-241» сортлы арыштың һәр бер гектарынан 27-шәр центнер урожай алынды.

Быйыл республикабыҙҙың колхоз, совхоз баҫыуҙарында ундар меңләгән гектар «Лютесценс-062», «Горделформе-010» сортлы бойҙай, «Победа», «Золотой дождь», «Московский-А 315» сортлы һоло, «Капитал» сортлы борсаҡ һәм башҡа сортлы ашлыҡтар сәселде. Был сорт ашлыҡтар хәҙер яҡшы булып шытып сыҡтылар. Бурыс — был сәсеүлектәрҙе, бигерәк тә орлоҡсолоҡ участкаларын ҙур хәстәрлек менән тәрбиәләп үҫтереүҙән тора.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләгәндә быйылғы яҙҙың үҙенсәлектәрен ныҡ иҫтә тоторға кәрәк. Башҡа йылдарға ҡарағанда, быйыл яҙғы сәсеү 10—15 көн иртә башланды һәм иртәрәк тамамланды. Апрель айының икенсе яртыһы йылы, ә май айының беренсе яртыһында һалҡындар булыу менән сәсеүлектәрҙә һәр төрлө ҡый үләндәре үҫте. Шуға күрә хәҙер сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эше бик серьез бурыстарҙың береһе булып тора.

Күп кенә райондарҙың баҫыуҙары йыш ҡына алабута, билсән, эт эсәге үләне, һәм башҡа бик күп төрлө зарарлы ҡый үләндәре менән ҡапланы. Был үләндәр үҙҙәре өсөн тупраҡта аҙ ғына шарттар булыу менән бик тиҙ үрсейҙәр. Тупраҡта булған туҡлыҡлы матдәләрҙе һәм дымды үҙҙәренә алып, культуралы үҫемлектәргә үҫергә ирек бирмәйҙәр.

Шуның менән бергә, ҡый үләндәре культуралы үҫемлектәр араһында төрлө ауыл хужалығы ҡоротҡостары үрсетеүгә лә сәбәп булалар. Үҫемлек ҡоротҡостарының күбеһе үҙҙәренең йомортҡаларын ҡый үләндәренең япраҡтарына, һабаҡтарына һалалар. Мәҫәлән, болон күбәләге үҙенең йомортҡаһын алабута япрағына, ужым күбәләге эт эсәге үләне япрағына һала.

Шишмә селекцион станцияһы «Лютесценс-062» сортлы бойҙай сәсеүлегендә ҡый үләндәрен үҙ ваҡытында утау һөҙөмтәһендә урожайҙың 35—40 процентҡа артыҡ алыныуын раҫланы. Утау иң мөһим тәрбиә сараларынан иҫәпләнә. Сәсеүлектәрҙе ваҡытында утау менән ҡый үләндәре бөтөрөлә. Һәр бер ҡый үләнен йолҡоп алыу менән тупраҡта дым һаҡланып ҡалына. Бына шуның өсөн дә утауҙы үҙ ваҡытында ойошторорға кәрәк.

Күп кенә колхоздарҙа сәсеүлектәрҙе утауға тейешле әһәмиәт бирелмәй. Шул арҡала урожай түбән була. Быйыл бындай етешһеҙлектәр булмаҫҡа тейеш. Ҡый үләндәрен, игеү үҫемлектәренә зарар итмәйенсә, һаҡлыҡ менән утарға, уларҙы тамырынан уҡ йолҡоп ташларға кәрәк. Йолҡонған ҡый үләндәрен сәсеүлектәр араһында ҡалдырырға ярамай. Улар ситкә сығарып ташлана йәки яндырыла. Шул уҡ ваҡытта соҡор, юл буйҙарындағы ҡый үләндәре сәскә атыу ваҡыттарында сабып ташлана.

Арыш, бойҙай, арпа, борсаҡ культуралары башаҡланыуға тиклем тупраҡта дымдың мул булыуын талап итәләр. Һуңғы көндәрҙә булған ямғырҙар ужымдарҙың һәм яҙғы ашлыҡтарҙың яҡшы үҫешләнеүенә ҙур ярҙам итте. Ләкин был ғына етмәй. Сәсеүлектәрҙе, беренсе нәүбәттә, орлоҡсолоҡ участкаларын һуғарыуға серьез иғтибар бирергә кәрәк. Үҙҙән ҡоролоҡло йылдарҙа сәсеүлектәрҙе һуғарыу бик яҡшы һөҙөмтәләр бирәйне. Колхоздарҙың тәжрибәләре урожайҙы күтәреүҙә сәсеүлектәрҙе һуғарыуҙың йоғонтоһо ҙур булыуын бик асыҡ күрһәтәләр. Әбйәлил районы Шәйморатов исемендәге колхоз былтыр һуғарылған 57 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 27-шәр центнер, ә һуғарыу үткәрелмәгән майҙандың һәр бер гектарынан ни бары 8-әр центнер урожай алды. Быйыл йәй был колхозда 1200 гектар сәсеүлек һуғарылаcаҡ. Шуның өсөн колхозда әҙерлек эштәре алып барыла. Дәүләкән районы «Яҡты тау» һәм «Ҡыҙыл йондоҙ» колхоздары һуғарылған һәм ашламалар индерелгән майҙандың һәр бер гектарынан 22-шәр центнер бойҙай урожай алыуға өлгәштеләр. Республикабыҙҙың йылғаларға, күлдәргә, һыу ятҡылыҡтарына бай булыуы был эште ойоштороуға тулы мөмкинлектәр бирә. Бигерәк тә ялан райондарҙа орлоҡсолоҡ участкаларын һуғарыу киң ҡулланылырға тейеш.

Орлоҡсолоҡ участкаларында сортлы утау үткәрергә кәрәк. Ул, бында төп сортлы культуранан башҡа культураларҙы һәм сорттарҙы йолҡоп алыуҙан тора. Мәҫәлән, көҙгө бойҙай араһындағы арыш башаҡ сығарыу ваҡытында йолҡоп алына. Орлоҡсолоҡ участкаларында ҡылсыҡһыҙ бойҙай сәселгән булһа, баш сығарыу осоронда унда үҫкән ҡылсыҡлы бойҙай йолҡоп ташланырға тейеш. Бөтә сортлы борсаҡтарҙың да сәскәләре аҡ төҫтә булып, уның араһында үҫкән баҫыу борсағы зәңгәр сәскә ата. Сортлы борсаҡ араһындағы баҫыу борсағын, сәскә төҫөнә ҡарап, утарға кәрәк. Ҡара һоло әрә төлгәшле, үткер, оҙон ҡара ҡылсыҡлы булып, башҡа культураларға ҡарағанда, иртә өлгөрәүсән. Ошо билдәләренә ҡарап, ҡара һоло өлгөргәнгә тиклем утап алына.

Сәгәләр, кишер, турнепс, шалҡан үҫемлектәре үҙҙәренең үҫеү ваҡытында тупраҡтың бик йомшаҡ һәм ҡый үләндәренән таҙа булыуын талап итәләр. Был культуралар шытып сыҡҡас, бер аҙ үҫеү менән, уларҙың бик зәғифтәрен, пасарҙарын йолҡоп һирәкләтергә кәрәк. Сәгәләр һәм турнепс өсөн бер үҫемлек менән икенсе үҫемлек араһы 15—20 сантиметр, рәт аралары 45 сантиметр киңлектә булырға һәм уларҙың рәт аралары йәй буйына 2-3 тапҡыр йомшартылырға, ҡый үләндәренән таҙартылырға тейеш.

Агроном Ә. Әхтәмов.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-49, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-19, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

Н 01332 Өфө газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 2500[illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№ 117(8834) 1951 йыл 16 ИЮНЬ шәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СӘСЕҮЛЕКТӘРГӘ ӨЛГӨЛӨ ТӘРБИӘ—ЮҒАРЫ УРОЖАЙ ҮҪТЕРЕП АЛЫУҘА МӨҺИМ САРА (1-се бит).

МТС һәм ер органдары профсоюзы өлкә комитетенең пленумы (1-се бит).

Совет халҡы А. М. Горький иҫтәлеген хөрмәтләй (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ғ. Вахитов. — Үтәлеште тикшереү — ВКП(б) райкомының иғтибар үҙәгендә (2-се бит).

З. Вәлиев. — Райком докладсыларының эше (2-се бит).

Ф. Зәйнуллин. — Ағиҙел йылға пароходствоһында етәкселектең ярамһыҙ стиле тураһында (2-се бит).

Д. Ғәлимов. — Кадрҙарҙың теоретик кимәлдәрен күтәреү — мөһим бурыс (2-се бит).

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР. (2-се бит).

КОЛХОЗ ЭКОНОМИКАҺЫ ТЕМАҺЫНА. — Г. Баян. — Учет — артель хужалығы менән идара итеүҙә ҡеүәтле рычаг (3-сө бит).

Р. Кәримова. — Языково МТС-ы урожай йыйыуға әҙерлектә әҙ (3-сө бит).

АУЫЛ СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ ТРИБУНАҺЫ. М. Вилданова. — Ауыл Советы һәм депутаттар (3-сө бит).

Х. Намалов. — «Совет работниктәре кемә» (3-сө бит).

Д. Коврижных. — Бесән сабып йыйнауҙы ойоштороу (4-се бит).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Нефть промышленноһының яңы үҫешенә

Совет нефтселәренең бөтә көрәше коммунизм төҙөүҙең бөйөк программаһын тормошҡа ашырыуға йүнәлдерелгән. Был программаны билдәләп, коммунизм зодчийы иптәш Сталин йыллыҡ нефть сығарыуҙы яҡын осорҙа 60 миллион тоннаға еткереүҙе бурыс итеп ҡуйғайны. Нефтселәр был бурысты уңышлы үтәүгә үҙҙәренең бөтә көстәрен, ижадтарын арнайҙар. Башҡортостан нефтселәре лә большевиктарса көрәшкә үҙҙәренең ҙур вкладтарын индерәләр, үҙ промыслаларының дебитен арттыралар, хеҙмәт методтарын камиллаштыралар.

Башҡортостан нефтселәре — һәр ваҡыт алдынғы сафта. Улар социалистик ярышта гүзәл өлгөләр бирәләр, һәр ваҡыттағы кеүек ҙур инициатива күрһәтеп, быйыл да совет нефтселәре араһында социалистик ярышты башлап ебәрҙеләр.

Республика нефтселәре үҙҙәренең был көрәштәрендә Совет хөкүмәтенең һәм большевиктар партияһының ҙур ярҙамын тоялар. Промыслалар, бораулау эштәре, бөтә башҡа ярҙамсы предприятиелар Тыуған ил техникаһының яңынан-яңы ҡаҙаныштары менән ҡоралландырыла, производствоның бик күп процестәре автоматлаштырыла, механизация индерелә. Нефтселәр, сталинса хәстәрлеккә яуап итеп, был бай техниканы һаҡлап эшләтеү, бөтә ҡеүәтенә файҙаланыу өсөн көрәшәләр.

Башҡортостан нефтселәре һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәнеләр. Үҙгән йылда, 1946 йылға ҡарағанда, нефть сығарыу 2,5 тапҡырға, бораулау эштәренең күләме 3,3 тапҡырға, нефть эшкәртеү 2 тапҡырға артты. Быйылғы күрһәткестәр айырыуса яҡшы. «Башнефть» һәм «Башнефтезаводы» берекмәләре планды уңышлы үтәп килә.

Башҡортостан нефтселәре, быйыл да үҙҙәренә күтәренке йөкләмәләр алып, иптәш Сталинға хат яҙҙылар. Башҡортостан нефтселәре Азербайжан, Татарстан һәм Ҡуйбышев өлкәһе нефтселәре менән социалистик ярышҡа сыҡтылар. Алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн нефтселәр айырыуса юғары темптар менән эшләйҙәр. Ярыш уларға яңынан-яңы уңыштар килтерә. «Туймазынефть» тресының промыслалары һәр ваҡыт пландан тыш нефть бирәләр. Скважиналарҙың туҡтауһыҙ эшләүе, тәүлек дебитен күтәреү өсөн операторҙан башлап мастерға, етәкселәргә тиклем көрәшәләр. Партия ойошмалары нефтселәрҙе ижади хеҙмәткә күтәреү өсөн политик-массовый эште юғары кимәлгә ҡуйҙылар.

Партия ойошмаһының инициативаһы менән беренсе номерле промыслала ҙур ойоштороу-техник саралар үҙгәрелә. Участкалар комплекслы итеп ойошторолғандар. Нефть сығарыу бригадаһы скважиналарҙың ер аҫты ремонты эштәрен дә үҙе башҡара. Хужалыҡ иҫәбендә эшләүҙә был участкаларға эшсе көстәрен дөрөҫ файҙаланыу, материалдарға, энергияға экономия яһауға, ә, иң мөһиме, пландан тыш нефть биреүҙе арттырыуға ҙур мөмкинлектәр бирҙе. Промысла коллективында новаторҙарҙың һаны арта. Бик күп эшселәр производствоны камиллаштырыу өсөн рационализаторлыҡ тәкдимдәр индерәләр.

Бындай ижади хеҙмәттең, бөйөк юлбашсыға биргән вәғәҙәне үтәүҙәге ныҡышмалы көрәштең гүзәл өлгөһө тресттың башҡа промыслаларында ла, «Ишембайнефть» тресында ла киң тарала. Һуңғы айҙарҙа бораулау эше яҡшырғандан-яҡшыра бара. «Ишембайнефть» тресының бораулаусылары күп ваҡыттар буйынса проходка планын үтәмәй киләләр ине. Хәҙер иптәш Сталинға биргән вәғәҙә менән рухланып, улар үҙ күрһәткестәрен яҡшырттылар, йөкләмәләрен арттырып үтәйҙәр.

Ағымдағы йыл — скважиналар бораулау эшендә турбина ысулын киң индереү йылы. Уның ярҙамында бик күп бораулау бригадалары юғары тиҙлек менән бораулауға өлгәштеләр. «Туймазынефть» тресында Социалистик Хеҙмәт Геройы Куприянов, атаҡлы бораулау мастеры Белянцинов һәм яңы рекорд ҡуйыусы мастер Сидоренко иптәштәр проходка тиҙлеген яңы юғарылыҡҡа күтәрҙеләр. Хәҙер күптәр улар өлгөһөндә эшләйҙәр.

Бындай уңыштар республика нефть промышленноһының башҡа тармаҡтарында ла бар. Нефть эшкәртеүҙә, төҙөлөш-монтаж эштәрендә, ярҙамсы предприятиеларҙа ла стахановса хеҙмәт методтарын производствоға индереү, техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу буйынса күп эштәр башҡарылды. Үҙгәрылған сараларҙың бөтәһе лә республика нефть промышленноһы предприятиеларында хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрҙе, сифат күрһәткестәрен яҡшыртты.

Шундай уңыштар менән бергә, республика нефть промышленноһы предприятиеларында файҙаланылмаған резервтар ҙа күп әле. Промыслалар дөйөм алғанда нефть сығарыу планын үтәһәләр ҙә, уларҙың ҡайһы бер участкалары Тыуған илгә бирергә тейеш булған нефтте сығарып еткермәйҙәр. Улар, алдынғы участкалар янында йәшәп, үҙҙәренең эске резервтарын файҙаланмайҙар. Һуңғы ваҡыттарҙа «Ишембайнефть» тресының икенсе номерле промыслаһында бындай етешһеҙлектәр айырыуса күп. Промысланың партия, профсоюз ойошмалары скважиналарҙың хәрәкәт итеүсе фондын һаҡлау өсөн көрәште етерлек кимәлдә ойоштормайҙар. План буйынса скважиналарҙың бер нисәһе хәрәкәткә ебәрелһә лә, уның урынына быға ҡарағанда күберәк скважинаның сафтан сығыуына юл ҡуйыла. Скважиналарҙың эшләү режимен күҙәтеп барыу менән ҡыҙыҡһыныу юҡ. Быға оҡшаш бик күп сәбәптәр арҡаһында, промысла коллективы үҙ йөкләмәһен генә түгел, государство планын да үтәмәй башланы.

Бындай хәл, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был промыслала ғына түгел. Айырым участкаларҙың, башҡаларға ҡарағанда, насарыраҡ эшләүе күп кенә промыслаларҙа бар. Файҙаланылмаған эске резервтар бораулау эшендә айырыуса күп. Бораулау конторалары буровойҙарҙың оҙаҡ ваҡыттар буйы эшһеҙ тороуҙары йыш була. Вышка монтажлау эшенең насар ойошторолоуы арҡаһында, «Туймазыбурнефть» тресының күп кенә бригадалары, яңы скважина көтөп, оҙаҡ ваҡыттар буйы эшһеҙ торалар. Бораулап бөткән скважиналарҙы эксплуатацияға биреүҙә лә ҙур тотҡарлыҡтар булғылай. Транспорт һәм башҡа ярҙамсы предприятиеларҙың да үҙ эштәрен еренә еткереп башҡармауҙары арҡаһында, нефть промыслаларына һәм бораулау конторалары ҙур тотҡарлыҡ яһала.

Республика нефтселәренең мөмкинлектәре ҙур. Эске резервтарҙы, быға тиклем хәрәкәтһеҙ ятҡан мөмкинлектәрҙе файҙаланыу нефть сығарыу һәм бораулауҙа ла, нефть эшкәртеү һәм төҙөлөш эштәрендә лә яңы уңыштар килтерәсәк. Хәҙер беҙҙең республика нефтселәре алдында нефть сығарыу һәм бораулау буйынса йыллыҡ программаны срогынан алда үтәү өсөн эшсе көстәрен һәм эш ваҡытын дөрөҫ файҙаланыу, бай техниканы һаҡлыҡ менән тулы ҡеүәтендә эшләтеү, гүзәл стахановса хәрәкәттең бөтә формаларын ҡулланыу, хеҙмәт етештереүсәнлегенең яңы күтәрелешен, коммунизм төҙөлештәре фондына пландан тыш продукция һәм экономия биреүҙе тәьмин итеү бурысы тора.

Был бурыстарҙы үтәү — Тыуған ил ҡеүәтен артабан үҫтереү, нефтселәрҙең Бөтә Союз ярышында еңеп сығыу, тынысльҡ эше өсөн барған көрәшкә, коммунизм төҙөлештәренә лайыҡлы вкладтар индереү ул. Был, аҙаҡ килеп, бөйөк юлбашсыға биргән вәғәҙәне большевиктарса, совет нефтселәренә хас булған намыҫ менән үтәү ул.

ВЦСПС СЕКРЕТАРИАТЫНДА

Төҫлө металл һыныҡтарын һәм ҡалдыҡтарын әҙерләү, ҡабаттан эшкәртеү һәм файҙаланыу тураһында

ВЦСПС секретариаты профсоюз комитеттарын төҫлө металл һыныҡтарын һәм ҡалдыҡтарын йыйнауҙа һәм әҙерләүҙә хужалыҡ ойошмаларына ярҙам күрһәтергә мәжбүр итте. Төҫлө металл һыныҡтарын һәм ҡалдыҡтарын файҙаланыуҙың халыҡ хужалығы әһәмиәте тураһында эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм уларҙың семья-ағзалары араһында киң аңлатыу эше үткәрергә, промышленность өсөн был сырьёны әҙерләү планын тулыһынса һәм арттырып уңышлы үтәү өсөн эшселәрҙең, инженер-техник работниктарҙың һәм хеҙмәткәрҙәрҙең социалистик ярышын ойошторорға тәҡдим итәлде.

Болондарҙа үҙе йөрөй торған бесән сапҡыстар эшләйҙәр

Ермолаевка. (Телефон аша). Көйөргәҙе районының колхоздары быйыл мал аҙығы әҙерләүҙе ойошҡанлыҡ менән башланылар. Бесән сапҡыстар яҡшы сифатлы итеп ремонтланды. Шулай уҡ бик күп яңы машиналар алынды. Хрущев исемендәге ауыл хужалығы артеле 4, «Үрнәк» колхозы 3 яңы бесән сапҡыс һатып алды.

Хәҙер бөтә колхоздарҙа ҡалҡыулыҡ һәм яланлыҡ болондарында массовый рәүештә бесән сабып йыйнау башланды. Салауат исемендәге ауыл хужалығы артеле иртә сроктарҙа етештерелгән бесәндән дүрт кәбән ҡойҙо инде.

Моряттал малсылыҡ совхозында үҙе йөрөй торған бесән сапҡыстар эшләйҙәр. Машиналар тәүге көндә үк норманы тулыһынса үтәнеләр, хәҙер киң майҙанлы болондарҙа туҡтауһыҙ бесән сабалар.

СӘСЕҮЛЕКТӘРГӘ ӨЛГӨЛӨ ТӘРБИӘ—ЮҒАРЫ УРОЖАЙ ҮҪТЕРЕП АЛЫУҘА МӨҺИМ САРА

☆☆

Колхозсылар намыҫ менән эшләйҙәр

Булганин исемендәге колхоз—Бәләбәй районында иң эре һәм алдынғы ауыл хужалығы артелдәренең береһе булып тора. Бында колхозсылар Совет агробиология фәне нигеҙендә эшләп, йыл һайын мул урожай үҫтерәләр.

Быйыл да яҙғы сәсеү эштәре иң яҡшы агротехник сроктарҙа тамамланды. Хәҙер был артелдең членджары сәсеүлектәрҙең бер тигеҙ, матур булып үҫеүҙәренә шатланып бөтә алмайҙар. Гектарға 120 бот урожай үҫтерергә алған социалистик йөкләмәләрен үтәү өсөн тулы мөмкинлек барлығын күрәләр. Ләкин улар тәбиғәттең уңайлы килгән шарттары менән мауығып ҡул ҡушырып тормайҙар. Хәҙер сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, утау, өҫтәмә аҙыҡландырыу эштәре үткәрелә.

— Сәсеүҙе уңышлы тамамлау, — ти колхоз председателе иптәш Дәүләтшин,— мул урожай алыу тәьмин ителде тигән һүҙ түгел әле. Уны тәрбиәләп үҫтерергә һәм ҡыҫҡа срокта юғалтыуһыҙ йыйнап алырға кәрәк.

Булганин исемендәге ауыл хужалығы артеле членджары яңы урожайҙы йыйнауға әҙерлектә бөтә киңлеге менән йәйелдерҙеләр. 5 урғыс ремонтланды. 10 бесторка кәрәк булһа, уның 8-е әҙер. Гоголев системаһындағы иген киптергестәрҙең икеһенә лә ремонт башланды. Был колхоздың электростанцияһы ашлыҡ һуғыуҙа, иген таҙартыуҙа файҙаланыласаҡ. Быйыл 5 урында япмалы ырҙын төҙөлә. Уларҙың икеһендә молотилкаларҙы электр энергияһы менән, икеһендә движок һәм береһендә быуа һыуы менән хәрәкәтләндереү күҙҙә тотола. Быны өсөн ҙур әҙерлек эштәре алып барыла.

Колхозсылар урожай йыйнау башланғанға тиклем бөтә хужалыҡ эштәрен тамамлап ҡалыуҙың ҙур әһәмиәткә эйә булғанлығын бик яҡшы аңлайҙар. Шуның өсөн дә пар һөрөү эше май айында уҡ тамамланды. Малсылыҡ фермаларында төҙөлөш эштәре ҡыҙыу бара. Колхозда бесән сабыу эше башланды.

И. Николаенко.

Сәсеүлектәр мул урожай вәғәҙә итәләр

Дәүләкән. (Телефон аша). Райондың колхозсылары, Украина игенселәренең өлгөһөндә, быйыл тағы ла мулыраҡ урожай үҫтереп алыу өсөн социалистик йөкләмә алғайнылар. Игенселәр үҙҙәренең Ленин — Сталин партияһына һәм Совет хөкүмәтенә биргән һүҙҙәрен үтәү өсөн баҫыуҙарҙа ҡыҙыу эшләйҙәр.

«Победа» һәм Мәжит Ғафури исемендәге һәм башҡа байтаҡ колхоздар утау эшен яҡшы сифатлы итеп тамамланылар.

Молотов исемендәге эреләтелгән ауыл хужалығы артелендә утауҙа һәр көндә 400-ҙән артыҡ колхозсы ҡатнаша. Утаусылар көндәлек норманы даими рәүештә арттырып үтәйҙәр. Бында 1074 гектар арыш һәм 2362 гектар бойҙай сәсеүлектәре ҡый үләндәренән таҙартылды. 385 гектар майҙанда көнбағыш сәсеүлегенең рәт аралары эшкәртелә.

— Сәсеүлектәр мул урожай вәғәҙә итәләр, — ти район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Петров. — Арыштар һеркә осора башланылар. «Победа», «Новая жизнь» һәм Мәжит Ғафури исемендәге колхоздарҙың айырым бригадалары арыштарҙы яһалма һеркәләндереү эшенә тотондолар.

Дәүләкән районында быйыл 6 мең гектар арыш, 10 мең гектар бойҙай һәм байтаҡ майҙанда техник культуралар сәсеүлектәре яһалма һеркәләндереләсәк.

Утауҙа норманы арттырып үтәйҙәр

Күгәрсен районының колхоздарында сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу эше киң йәйелдерелде.

«Новый путь» колхозы членджары 922 гектар бөртөклө ашлыҡ культураларын утанылар. Андреев исемендәге колхозда 750 гектар сәсеүлек уталды. 55 гектар көнбағыштың рәт аралары йомшартылды.

«Авангард», «Серп и молот» колхозҙарында утауҙа көн һайын 120—140 колхозсы ҡатнаша. Улар, үҙ-ара ярышып, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрҙеләр. «Серп и молот» колхозы членджары З. Сәлихова, Ш. Байғазакова, Е. Байғазакова, Х. Әхтәмова, Р. Сәлихова иптәштәр утауҙа көндәлек нормаларын 105—110 процентҡа үтәйҙәр.

Х. Дәүләтшин.

Бригадалар үҙ-ара ярышалар

Ҡандра районы Молотов исемендәге колхоз (председателе иптәш Яҡупов) юғары урожай үҫтереү өсөн бөтә сараларҙы ойоштороҙо. Сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыуҙа беренсе һәм өсөнсө номерлө бригадалар алда баралар.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 455 гектар бойҙай һәм һоло сәсеүлеге уталды, 125 гектар сәсеүлек өҫтәмә аҙыҡландырылды.

М. Сәләхов.

☆

УРОЖАЙҘЫҢ ЯҘМЫШЫ ТУРАҺЫНДА ХӘСТӘРЛЕК КҮРЕЛМӘЙ

«Йондоҙ» колхозы председателе иптәш Сәғәдиев сәсеүлектәрҙе утауҙы ойоштороу тураһында етерлек хәстәрлек күрмәй. Шул арҡала баҫыуҙарҙа сәсеүлектәр утаусыларҙы көтөп ултыралар.

Колхозда һәр көндә 400 кешене утауға сығарырға мөмкин. Ләкин эш ойошторолмағанлыҡтан, бында утауҙа 80 — 100 кеше генә ҡатнаша. Улар ҙа көндәлек нормаларҙы үтәмәйҙәр.

Һәҙемтәлә «Йондоҙ» колхозында 438 гектар бойҙайҙың 80 гектары ғына уталды. Һоло, тары һәм урман полосаларында бер тапҡыр ҙа утау үткәрелмәгән әле. Уларҙың күп өлөшөн билсән һәм башҡа ҡый үләндәре ҡаплаған. Шул уҡ ваҡытта бында яҙғы сәсеү планы үтәлмәне, пар һөрөү планы әҙәкләүҙә бара. Шулай булһа ла, иптәш Сәғәдиев колхозда һабан туйы үткәреү менән шөғөлләнә. Ошо айҡанлы 3—5 июнь көндәрендә бер генә колхозсы ла баҫыуға эшкә сыҡманы.

Ғафури районында, ғөмүмән, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эше үҙ ағышына ташланылған. Быны түбәндәге фактар бик асыҡ күрһәтәләр. Районда 9557 гектар бойҙайҙың 1363 гектары, 6098 гектар һолоноң 457 гектары ғына уталған. Шәкәр сөгөлдөрө сәсеүлектәрен тәрбиәләү эше тағы ла насарыраҡ тора. 1200 гектар шәкәр сөгөлдөрөнөң тик 120 гектары ғына эшкәртелгән.

Был фактар Ғафури районында урожайҙың яҙмышы тураһында большевистик хәстәрлек күреүҙе талап итәләр.

Ә. Хәлиуллин.

Утау эше ойошторолмаған

Баймаҡ районының колхоздарында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләмәйҙәр. Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Ҡотлоғәләмов, баш агрономы Вәхитов иптәштәр был эштә колхоздарға көндәлек етәкселек итмәйҙәр.

«Победа» колхозында (председателе иптәш Волков) бөтә сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәре ҡаплаған. Улар урожайҙың яҙмышына ҡурҡыныс тыуҙыралар. Был колхозда утауҙа көн һайын 100—120 кеше ҡатнаштырырға мөмкин. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, утау ойошторолмаған. Колхоз етәкселәре был турала күп һөйләнәләр, ләкин эште ойоштормайҙар.

Райондың башҡа бик күп колхоздарында ла шундай уҡ хәл. «Навил», «Ударник», «Ирәндек», Ленин, Ҡуйбышев, Ворошилов исемендәге колхоздарҙа ла көн һайын тик 15—20 кеше генә утауға йөрөй.

Баймаҡ районы колхоздарында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе баһаламайҙар. Быға сик ҡуйылырға тейеш.

И. Зарипов.

МТС һәм ер органдары профсоюзы өлкә комитетенең пленумы

12—13 июндә Өфөлә МТС һәм ер органдары работниктары профессиональ союзының Башҡортостан өлкә комитеты пленумы булып үтте.

Пленум 1951 йылда мал аҙығы әҙерләүҙә һәм урожай йыйнауҙа тракторҙарҙы, комбайндарҙы һәм башҡа ауыл хужалығы машиналарын тулыһынса эшләтеү өсөн резервтарҙы файҙаланыу мәсьәләләрен ҡараны. Был турала доклад менән БАССР ауыл хужалығы министерствоһының МТС-тар Управлениеһы баш инженеры иптәш Простенюк сығыш яһаны.

— Республикабыҙҙың колхоздары, МТС-тары, — ти иптәш Простенюк, — партияның һәм Совет хөкүмәтенең ғәйәт ҙур ярҙамы арҡаһында алдынғы техника менән байыҡтырылдылар. Был гүзәл техниканы оҫта файҙаланыусы кадрҙар үҫеп етеште. Башлыса, тап быһа ошо фактор быйылғы яҙғы сәсеүҙең государство планын, үҙгән йылға ҡарағанда, иртәрәк һәм яҡшыраҡ үтәргә мөмкинлек бирҙе.

Быйыл республиканың колхоздары һәм совхоздары, үҙгән йылға ҡарағанда, 294 мең 900 гектарға артыҡ сәстеләр. Алдынғы МТС-тар, трактор бригадалары, трактористар социалистик ярышты киң йәйелдереү һәм тракторҙарҙы, ауыл хужалығы машиналарын белеп файҙаланыу арҡаһында эштә бик яҡшы күрһәткестәр бирҙеләр. Мәҫәлән, Приют МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры иптәш Ғәбәйдуллин ошо йылдың 20 майына уҡ инде шартлы бер трактор менән 359 гектар ер эшкәртте. Был, республика күләмендәге уртаса цифрҙан ике тапҡырҙан артыҡ, тигән һүҙ. Базан МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Рябов шартлы һәр бер тракторға 200-ҙән артыҡ гектар ер эшкәртте. Бригада смена нормаһын систематик рәүештә 150 процентҡа үтәп килә. Дәүләкән күргәҙмә-тәрәк МТС-ында иптәш Рогачев бригадаһы ла быйыл бик яҡшы эшләне.

Бындай миҫалдарҙы бик күп килтерергә мөмкин.

Шулай ҙа республикалағы күп кенә МТС-тар трактор агрегаттарын юғары етештереүсәнле файҙаланыуҙа ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләйҙәр әле. Булған ҙур резервтар файҙаланылмай. Быны ошоноң арҡаһында ла республикала, йомшаҡ ер һөрөүгә күсереп иҫәпләгәндә, шартлы һәр бер тракторға көнөнә 4 гектар урынына 2 гектар ғына ер эшкәртелгән. Ә тракторҙарҙың буш тороуҙары 600 мең сәғәткә барып етте. Был бөтә эш ваҡытының 13,5 проценты, тигән һүҙ. Оло Теләк, Нуриман, Бүздәк, Охлебинин, Архангель, Покровка һәм Бүрлы МТС-тары айырыуса насар эшләнеләр. Был МТС-тарҙа профсоюз ойошмалары социалистик ярышты ойоштороуҙа үҙҙәренең эшлекле йоғонтоларын күрһәтә алманылар.

Пленум шул уҡ ваҡытта күп кенә МТС-тарҙың, ЛЗС-тарҙың һәм ЛМС-тарҙың мал аҙыҡтары әҙерләүҙә һәм урожай йыйнауға әҙерлектә ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләүҙәрен билдәләне. Бесән сапҡыс машиналарға ремонт тамамланмаған, ә комбайндарҙы, урғыс һәм молотилкаларҙы ремонтлау барышы насар. Профсоюз ойошмалары был бурысты үтәүгә механизаторҙар кадрҙарының иғтибарын туплмайҙар.

Күп кенә урындарҙа мал аҙығы әҙерләү һәм урожай йыйнау эштәрендә кәрәк булған кадрҙарҙы, бигерәк тә, механизаторҙар кадрҙарын әҙерләүгә ныҡлы иғтибар бирелмәй. Профсоюз ойошмалары был өлкәлә үҙҙәренең ойоштороусанлыҡ ролдәрен бик йомшаҡ үтәйҙәр.

Көн тәртибендә торған был мөһим мәсьәләләргә арналған доклад буйынса пленумда 12 кеше сығып һөйләне. Улар үҙҙәренең сығыштарында профсоюз эшендәге байтаҡ серьез етешһеҙлектәрҙе асып һалдылар һәм уларҙы бөтөрөү өсөн күп кенә эшлекле тәҡдимдәр индерҙеләр.

Пленум шулай уҡ профессиональ союздарҙың 2-се Бөтә Союз съезы, МТС һәм ер органдары союзының өлкә конференцияһы ҡарарҙарының үтәлеше тураһындағы мәсьәләне ҡараны. Союздың өлкә комитеты председателе иптәш Харин был мәсьәлә буйынса доклад һөйләне.

Пленум профсоюз ойошмаларында ойоштороу-массовый эштең әле ҡәнәғәтләнмәҫлек тороуын билдәләне. Күп кенә профсоюз ойошмалары һуңғы ике йыл эсендә профсоюзға яңы членджар ҡабул итеү менән бөтөнләй шөғөлләнмәгәндәр. Мәҫәлән, Ҡарыш МТС-ының профсоюз ойошмаһында ике йыл буйына ни бары бер генә кеше ҡабул ителгән. Шуға күрә лә бында эшләүселәр һанына ҡарата профсоюз членджары бары тик 43 процент кенә тәшкил итеүе бер ҙә ғәжәп түгел. Шундай уҡ фактты Хоҙайбирҙе, Бажалы МТС-тарында ла осратырға мөмкин.

Ойоштороу-массовый эште юлға һалған урындарҙа хәл бөтөнләй башҡаса. Мәҫәлән, Ермолаевка, Ҡариҙел МТС-тарында рабочком председателдәре Петров һәм Носиков иптәштәр ошо йылдың тик беренсе кварталында ғына ла бөтә эшләүселәрҙең профсоюзға йәлеп итеүҙәренә өлгәштеләр. Бында профсоюз органдары көндәлек, йәнле эш алып баралар, эшселәрҙең производство һәм культура шарттары тураһында даими хәстәрлек күрәләр. Тимәк, эште большевиктарса ойошторғанда серьез уңыштарға өлгәшергә мөмкин.

Пленум шулай уҡ күп кенә профсоюз ойошмаларында профсоюз активының ойоштороу-массовый эшкә йәлеп ителмәүе, профсоюз членджарының производство-техник белемдәрен күтәреүгә ныҡлы иғтибар бирелмәүе тураһында билдәләп үтте.

Пленумда ҙур телмәр менән БАССР ауыл хужалығы министры иптәш Нәбиуллин сығыш яһаны.

Пленум тикшерелгән ике мәсьәлә буйынса конкрет ҡарар ҡабул итте.

10 июндә Мәскәүҙә, Белорус вокзалы майҙанында бөйөк рус яҙыусыһы Алексей Максимович Горькийға тантаналы рәүештә һәйкәл асылды.

Һүрәттә: А. М. Горькийға һәйкәл.

В. Савостьянов һәм В. Мастюков фотоһы.

(ТАСС фотохроникаһы).

Совет халҡы А. М. Горький иҫтәлеген хөрмәтләй

Илебеҙ хеҙмәтсәндәре революция дауылы хәбәрсеһе, бөйөк рус яҙыусыһы А. М. Горькийҙың яҡты иҫтәлеген хөрмәтләйҙәр. Предприятиеларҙа, учреждениеларҙа, клубтарҙа, культура йорттарында совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусының тормошо һәм ижады тураһында лекциялар һәм беседалар үткәрелә. Ҡала һәм ауыл библиотекаларында яҙыусыға арналған күргәҙмәләр асыла. Бындай күргәҙмәләр Ташкентта, Өфөлә, Ровнола асылдылар.

Бабаюрт районының (Дағстан АССР-ы) библиотекаһы «Горький — тыныслыҡ өсөн көрәшсе» тигән китап күргәҙмәһен ойошторҙо. Библиотека работниктары баҫыу стандарында А. М. Горькийҙың «Ҡыҙ һәм үлем», «Дауыл хәбәрсеһе» тигән һәм башҡа әҫәрҙәрен уҡыйҙар.

Арзамаста А. М. Горький тарафынан нигеҙ һалынған библиотекала яҙыусының ижади юлын сағылдырыусы ҙур күргәҙмә асылды.

Илебеҙҙең бөтә библиотекаларында һәм китап магазиндарында А. М. Горький әҫәрҙәренә талаптың ғәйәт ҙур булыуы билдәләнелә. Бөйөк рус яҙыусыһының ижады Грузияла бөтә халыҡ араһында киң таралған. Уның әҫәрҙәренең ҙур өлөшө грузин теленә тәржемә ителгән.

Ҡырғыҙстанда ла А. М. Горький әҫәрҙәрен һөйөп уҡыйҙар. Эшселәр, колхозсылар, интеллигенция яҙыусының «Әсә», «Минең университеттарым», «Маҡар Чудра» тигән һәм башҡа әҫәрҙәрен үҙҙәренең әсә телдәрендә уҡыйҙар. А. М. Горькийҙың үлеүенә 15 йыл тулыуға ҡарата уның мәҡәләләренең һәм памфлеттарының йыйынтығы баҫылып сыға.

Бөйөк пролетар яҙыусыһының исеме Литва хеҙмәтсәндәренә бик яҡын һәм һөйөклө исем. А. М. Горькийҙың Литва теленә тәржемә ителгән беренсе әҫәре булып 1902 йылда ҡулдан яҙылған «Дауыл хәбәрсеһе тураһында йыр» тора. Тәржемәсенең исеме билдәһеҙ булып ҡалды. Литвала Совет власы урынлашҡас, республика хеҙмәтсәндәре А. М. Горький китаптарын киң уҡыу мөмкинлеген алдылар. Уның әҫәрҙәре 300 меңгә яҡын данала баҫылып сыға. (ТАСС).

• • •

АЛМА-АТА. (ТАСС). А. М. Горькийҙың үлеүенә 15 йыл тулыу айҡанлы Ҡаҙаҡ ССР-ының китап палатаһы бөйөк рус яҙыусыһының әҫәрҙәрен ҡаҙаҡ телендә баҫып сығарыуға йомғаҡ яһаны.

Һуңғы 15 йыл эсендә республикала совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусының 17 төрлө китабы баҫылып сыҡты. Улар араһында — «Әсә», «В. И. Ленин», «Балаҫаҡ», «Ҡыҙ һәм үлем», һайланма хикәйәләре бар. Горькийҙың драматик әҫәрҙәре айырым китап булып баҫылып сыҡты.

Горькийҙың Тыуған ерендә

ГОРЬКИЙ, 14 июнь. (ТАСС). 14 июндә А. М. Горькийҙың әҙәбиәт музейында бөйөк яҙыусының үлеүенә 15 йыл тулыуға ҡарата экспозиция асылды.

Музейҙа «Горький һәм партия», «Горький һәм совет фәне», «Горький — бөтә донъяла тыныслыҡ һәм демократия өсөн көрәшсе» тигән һәм башҡа күп кенә яңы темалар эшләнде. Октябрь революцияһынан һуң Горькийҙың тормошон һәм ижадын сағылдырыусы музейҙың бүлектәре яңынан эшләнделәр һәм киңәйтеләләр. Музей урынаҡы художниктарҙың күп кенә яңы картиналарын алды.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Үтәлеште тикшереү—ВКП(б) райкомының иғтибар үҙәгендә

Әбйәлил районы партия ойошмаһының был йылдың март айында булып үткән конференцияһы райкомдың һәм райондағы совет, хужалыҡ ойошмаларының эшендәге серьез етешһеҙлектәрҙе асып, уларҙы тиҙ арала бөтөрөү һәм партия-ойоштороу, партия-политик эште яңы талаптарға яуап бирерлек кимәлгә күтәреү юлдарын билдәләгәйне.

Конференцияла делегаттар ҡайһы бер тәүге партия ойошмаларының ауыл хужалығының төп мәсьәләләренә тейешле иғтибар бирмәүҙәрен күрһәттеләр һәм уларҙың эшендәге етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләнеләр. Райкомдың әрләтелгән колхоз партия ойошмаларына аҙ ярҙам итеүе тураһында әйттеләр.

Конференциянан һуң беҙ делегаттарҙың тәнҡитле иҫкәртеүҙәрен һәм практик тәҡдимдәрен дөйөмләштереп, уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн конкрет саралар билдәләп үттек. Билдәләнгән саралар араһында, тәүге партия ойошмаларының эшенә даими ярҙам күрһәтеү маҡсатында, урындарға райондың етәксе работниктәрен ебәреп ҡайтарыу мөһим урын алып тора. Хәҙер райком работниктәре урындағы партия ойошмаларында осраҡлы ғына булмайҙар, ә төҙөлгән график буйынса баралар һәм уларҙың эшен ентекләп тикшереп, практик ярҙам күрһәтәләр. Аҙ практикалы тәүге ойошма секретарҙәренә ярҙам итеүгә райком айырыуса ҙур иғтибар бирә.

Райком аппараты үҙе лә партия-ойоштороу һәм партия-политик мәсьәләләр менән серьез шөғөлләнә башланы. Бюро ултырыштарында тәүге партия ойошмаһы секретарҙәре регуляр тыңлана. Ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшерә барыу хәҙер зәмә-әҙлә бер тәртипкә һалынды.

Конференциянан һуң, беҙ, беренсе нәүбәттә, быйылғы яҙғы сәсеү эштәрен иң ҡыҫҡа агротехник срокта үткәреүгә әҙерләнеүгә айырыуса көсәйттек. Был серьез бурысты большевистик ойошҡанлыҡ менән үтәп сығыу, конференция күрһәткән етешһеҙлектәрҙе бөтөрә барыу йүнәлешендә практик эш булып торорға тейеш ине.

Яҙғы сәсеүгә төшөүҙән алда уҡ райком һәм район Советы исполкомы совхоз, МТС һәм колхоздарҙың яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлектәрен ныҡлап тикшерҙеләр. Тикшереү һөҙөмтәләре колхозсыларҙың, совхоз һәм МТС работниктәренең даими йыйылыштарында өйрәнелде һәм асылған етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөү өсөн тейешле саралар билдәләнде. Бынан һуң 10—12 көн үткәс беҙ билдәләнгән сараларҙың тормошҡа ашырылыуына икенсе тапҡыр тикшереү үткәрҙек.

Юғары урожай өсөн һәм общественный малсылыҡты үҫтереү планын үтәү өсөн көрәштең уңышы массовый-политик эштең торошона ныҡ бәйләнгән. Шуға күрә конференциянан һуң тәүге партия ойошмаларында партия-политик эштең ҡуйылышына тикшереү үткәрҙек. Коммунистарҙың, комсомолецтарҙың колхоз производствоһына дөрөҫ урынлаштырылыуын яңынан ҡарап сыҡтыҡ һәм улар эштең иң яуаплы участкаларына беркетелде. Миҫалға «Салауат батыр» колхозын алырға мөмкин. Был колхоздың партия ойошмаһына иптәш Бадеева етәкселек итә. Колхоздың йылҡысылыҡ фермаһы мөдире булып коммунист иптәш Алсынбаев эшләй. Һарыҡсылыҡ эшен коммунист иптәш Йәнйегетов алып бара. Улар үҙҙәренә тапшырылған эште намыҫ менән башҡаралар. Колхозда комсомол ойошмаһы бар, унда 32 комсомолец иҫәпләнә. Комсомолецтар колхоз производствоһында алдынғы эш өлгөләре күрһәтәләр.

Хәҙерге көндә беҙҙең агитаторҙар пар һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшендә эшләүселәрҙе һәм малсылыҡ, төҙөлөш работниктәрен хеҙмәтләндерәләр.

Юғары урожай өсөн көрәштә механизаторҙар хәл иткес роль уйнайҙар. Шуға күрә райком механизаторҙар араһында агитацион-массовый һәм ойоштороу эштәрен алып барыуға айырыуса ҙур иғтибар бирә. Беҙ яҙғы баҫыу эштәре башланыр алдынан колхоз председателдәренең һәм трактор бригадаһы бригадирҙарының семинарҙарын үткәрҙек. Семинарҙа трактор бригадаларында эште ойоштороу буйынса аныҡ күрһәтмәләр бирелде һәм бюро ултырышында трактор бригадаһы бригадирҙарының һәм учетчиктарының составын ҡарап сығып, раҫланыҡ.

«Путь коммунизма» колхозында, баҫыусылыҡ бригадаһы менән трактор бригадаһы араһында дөрөҫ мөнәсәбәт булдырыу арҡаһында, яҙғы сәсеү уң көн эсендә, юғары сифатлы итеп тамамланды. Колхозда тракторсыларҙың нормаль эшләүҙәре өсөн бөтә шарттар тыуҙырылды. Һөҙөмтәлә был колхозды хеҙмәтләндереүсе Бармин һәм Осокин иптәштәрҙең бригадалары Иван Бунсов методын ҡулланып, трактор эштәренең планын арттырып үтәнеләр.

Ошо уңышлыҡтар менән бергә беҙҙең эшебеҙҙә етешһеҙлектәр ҙә бик күп әле. Ҡайһы бер трактор бригадалары бригадирҙарының ойоштороусанлыҡ ролдәре түбән. Хеҙмәт дисциплинаһы йомшаҡ булған һәм эш дөрөҫ ойошторолмаған бригадалар ҙа бар. Был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн ныҡышмалы эш алып барыу район партия ойошмаһының иғтибар үҙәгендә тора.

Конференцияла делегаттар колхоз партия ойошмаларын, шул иҫәптән райкомды ла, социалистик ярышҡа йомшаҡ етәкселек иткәндәре өсөн тәнҡитләгәйнеләр. Яҙғы сәсеүгә төшөр алдынан беҙ колхоздар, баҫыусылыҡ һәм трактор бригадалары, совхоздар, МТС-тар, айырым колхозсылар һәм механизаторҙар араһында социалистик ярыш ойоштороуҙ һәм уларҙың үҙ-ара ярыш договорҙары төҙөшеүҙәренә өлгөштек. Унан ары, ярыш йөкләмәләренең үтәлешенә йомғаҡ яһап барыуға иғтибарҙы көсәйттек.

Район газетаһы, колхоз, МТС һәм совхоз стена газеталары, бригадаларҙа сығарылған «Боевой листоктар» ярыш алдынғыларының эшен яҡтыртып баралар. Алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен дөйөмләштереүгә ярҙам итәләр.

Конференциянан һуң үткәрелгән ошо саралар беҙгә яҙғы сәсеүҙе 15 майға тулыһынса тамамлап, бөтә көстө пар һөрөү, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшенә туплап алырға мөмкинлек бирҙе. Беҙ хәҙер пар һөрөү планын тамамлау алдында торабыҙ. МТС һәм колхоздарҙа ҡыҙыу темп менән комбайндарҙы, ауыл-хужалығы машиналарын ремонтлау, урожай йыйыуға әҙерләнеү эштәре алып барыла.

Сәсеүлектәрҙе дөрөҫ һәм яҡшы тәрбиәләүҙе, урожай йыйыуға тулы әҙерлек менән килеүҙе тәьмин итеү өсөн массовый-политик эштәрҙе артабан йәйелдереү беҙҙең алдыбыҙҙа торған мөһим бурысыбыҙ ул.

Ғ. Вахитов,

ВКП(б)-ның Әбйәлил райкомы секретары.

Ағиҙел йылға пароходствоһында етәкселектең яраҡһыҙ стиле тураһында

Ағиҙел йылға пароходствоһында йөк һәм пассажирҙар пароходтарының хәрәкәт расписаниеһен боҙоу ваҡиғалары бар. Шул арҡала промышленносҡа, ауыл хужалығына һәм төҙөлөш ойошмаларына йөктәр бик күп һуңлап киләләр.

Өфө — Ҡариҙел линияһының йөк һәм пассажирҙар йөрөтөү судноларын ритмһыҙ эшләйҙәр һәм судноларҙы оҙатыу буйынса расписаниела билдәләнелгән интервалдар һаҡланмай. Пристанда ҙур ғына етешһеҙлектәр бар. Билет кассаларының эше тураһында белдереүҙәр юҡ, дежурный кассирҙарҙың фамилиялары яҙылып ҡуйылмаған. Пассажирҙар ҡайһы пароходта күпме урын барлығын белмәйҙәр. Бындай етешһеҙлектәрҙең бөтәһе лә пароходствоның һәм Өфө пристане етәкселәренең пассажирҙарҙы йөрөтөүгә һәм уларҙы культуралы хеҙмәтләндереүгә яуапһыҙ ҡарауҙары менән аңлатыла. Быны дөрөҫләү өсөн «Октябрьск» пароходын оҙатҡанда булған ваҡиғаны ғына күрһәтеү ҙә етә.

1951 йылдың 19 майында иртән пристандең белешмәләр бюроһы «Октябрьск» пароходының Өфө — Ҡариҙел рейсенә китмәүе тураһында белдерҙе. Ә 3—4 сәғәттән һуң ул шул уҡ көндө 16 сәғәттә «Октябрьск» пароходының Ҡариҙелгә китеүе тураһында иғлан итте. Пристань пассажирҙар менән тулы. Бөтә халыҡ түҙемһеҙлек менән билет кассаһының асылыуын көтә. Өфө пристаненең 5-се участкаһы начальнигы иптәш Сәмиғуллин билеттең һатыла башланыуы менән ҡыҙыҡһынған пассажирҙарҙы, билет тиҙҙән һатыла башланасаҡ, тигән яуап менән тынысландырҙы. Ләкин күп тә үтмәне дежурный диспетчер:

— Ағиҙел пароходствоһының хәрәкәт начальнигы иптәш Шипановтың приказы буйынса «Октябрьск» пароходының таҙаны таҙартылырға тейеш, шунлыҡтан бөгөн пароход рейсҡа китмәй, — тип белдерҙе.

Бындай белдереү пассажирҙар араһында законлы ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы, һәм улар пристандән китергә мәжбүр булдылар. Ләкин эш быны менән генә бөтмәне. Әле пассажирҙарҙың бер өлөшө таралып өлгөрмәгәйне. Ағиҙел йылға пароходствоһы начальнигының урынбаҫары иптәш Спеховтың, пароходты хәҙер үк рейсҡа оҙатырға, тигән приказы килеп төштө.

Белешмәләр бюроһы:

— «Октябрьск» пароходы бөгөн Ҡариҙелгә китәсәк, — тигән белдереү иғлан итте. Ләкин хәҙер һуң ине инде. Пассажирҙарҙың күп өлөшө таралып өлгөргәйне. Пароходство һәм пристань етәкселәренең үҙ бурыстарына ғәмһеҙ һәм яуапһыҙ ҡарауҙары һөҙөмтәһендә, «Октябрьск» пароходы 16 сәғәттә китеү урынына, рейсҡа тик 22 сәғәттә генә ҡуҙғалып китте. 21 майҙа «Досфлот» пароходы менән дә шундай уҡ ваҡиға булды.

Пароходствоның эшендә әле етешһеҙлектәр расписаниене боҙоу ваҡиғалары менән генә сикләнеп ҡалмай. Уның пристандәрендә һәм судноларҙа пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереү буйынса бик күп тәртипһеҙлектәрҙе күрергә мөмкин. Пароход ресторанарында һәм буфеттәрендә йәшелсә, һөт һәм балыҡ блюдалары юҡ. Хатта һыра һәм емеш һыуҙары менән тәьмин итеүҙә лә әҙәклектәр була. Аш түбән сифатлы әҙерләнә. Ресторан работниктәре пассажирҙарҙы насар хеҙмәтләндерәләр. Миҫал өсөн алыҫҡа йөрөргә кәрәкмәй. Быны Өфө—Ҡазан линияһында йөрөүсе «Никитин» пароходында асыҡ күрергә мөмкин. Бөтә был факттар пароходстволары етәксе работниктәрҙең пассажирҙар пароходтарының хәрәкәт расписаниеһен аныҡ үтәүҙе тейешле контролгә алмауҙары тураһында һөйләйҙәр. Графикте һәм расписаниене боҙоуҙа ғәйепле кешеләр бер ниндәй язаһыҙ ҡалдырылалар. Дөрөҫ, ҡайһы бер етәкселәр пассажирҙарҙы культуралы хеҙмәтләндереү тураһында йыш ҡына һөйләйҙәр. Ләкин бөтә эш тик ҡағыҙҙа һәм һүҙҙә генә ҡала.

Пароходствола навигация башланғас та, пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүҙә бындағы етәкселектең яраҡһыҙ стиле тураһында пароходство матбуғатында күп кенә яҙылды. Ләкин етәксе работниктар үҙ эштәрендә тейешле һығымта яһаманылар. Етәкселектә булған серьез етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә йүнәлдерелгән практик саралар күрелмәй. Эш элеккесә дауам итә. Бындай хәл, әлбиттә, артабан түҙеп торорлоҡ түгел. Пароходствоның һәм пристандең етәксе работниктәре, етәкселектең бындай стилен ҡырҡа бөтөрөп, бөтә эште, һәләтлелекте һәм энергияны навигация планын срогынан алда тамамлауға йүнәлдерергә бурыслылар. Һәм быны һис шикһеҙ үтәрҙәр, тип ышанабыҙ.

Ф. Зәйнуллин,

Ағиҙел йылға пароходствоһы полит-бүлеге инструкторы.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Общественный туҡланыуҙың сифаты яҡшыртылырға тейеш

Өфө паровоздар ремонтлау заводының столовойында әҙерләнгән ашамлыҡтарҙың сифаты насар, санитария-гигиена талаптары һаҡланмай. Аштар билдәләнгән нормалар менән түгел, ә юғарылатылған хаҡ менән һатылалар, столовойҙың работниктәре клиенттар менән тупаҫ мөнәсәбәт итәләр.

Мәҫәлән, 4 июндә менюҙа ҡайһы бер һатылған украинский щиҙең хаҡы 1 һум 23 тин тип яҙылған һәм ул шул хаҡ менән һатылды ла. Ә 6 июндә шул уҡ щиҙең хаҡын тикшереп ҡарағанда, һуңынан да уның ни бары 73 тин торғанлығы беленде. Аштан себен һәм башҡа төрлө сүп-сар сығыу факттары була.

Столовойҙың сотрудниктәре хеҙмәтсәләрҙең жалобаларын иҫкә алып, булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, ашамлыҡтың сифатын яҡшыртыу урынына, клиенттар менән тупаҫ мөнәсәбәт итәләр, уларҙы төрлө эшәке һүҙҙәр менән тиргәйҙәр. Етешһеҙлектәр тураһында жалоба китабына яҙҙырмау өсөн бөтә сараларҙы күрәләр.

Столовойҙа паровоздар ремонтлау заводының һәм Өфө тимер юлының йөрөгән эшселәре туҡлана. Улар общественный туҡланыуҙың сифатын яҡшыртыуҙы, клиенттар менән культуралы мөнәсәбәт итеүҙе талап итәләр.

С. Әхмәтов,

Өфө паровоздар ремонтлау заводының тәгәрмәстәр цехы контроль бүлегенең инспекторы.

—☆—

Был—ҙур етешһеҙлек

Октябрьский ҡалаһы — республиканың ҙур промышленность үҙәктәренең береһе. Ҡала бит йылдан аҙ ғына артыҡ йәшәүе осоронда бик ныҡ үҫте, унда йәшәүселәрҙең һаны көндән-көн арта бара.

Ҡала хеҙмәтсәндәре араһында башҡорт һәм татар милләтенән булған кешеләр ҙур һан тәшкил итәләр. Ләкин уларҙы культура яғынан хеҙмәтләндереү өлкәһендә күп кенә етешһеҙлектәр йәшәй. Октябрьский — нефтселәр ҡалаһы Башҡорт государство Академия театрының һәм Башҡорт государство филармонияһының артистарының иғтибарынан ситтә ҡалып килә. Академия театры коллективынан үҙған йылда бер тапҡыр был ҡаланың юбилей көнөндә килеп ваҡыт менән генә ҡәнәғәтләнделәр. Башҡорт государство филармонияһы артистары иһә бөтөнләй булмайҙар.

Бында ғәйеп театр етәкселәренә булған кеүек, ҡаланың етәксе партия, совет ойошмаларында ла бар. Улар был мәсьәлә менән, күрәһең, аҙ ҡыҙыҡһыналар, уны ойоштороуҙа тейешле сара күрмәйҙәр.

1-се промысла операторы — Рәхмәтуллин,

3-сө промысла операторы — Ғәйнетдинов.

—☆—

Досарм ойошмаһы эшләмәй

1948 йылдың декабрендә Зианчура һәм Абзан райондарындағы Досарм ойошмаларын бергә ҡушып район-ара ойошма төҙөгәйнеләр. Район-ара Досарм ойошмаһының үҙәге Зианчура районында ҡалдырылды һәм уның председателе итеп иптәш Идрисов һайланды. Шул ваҡыттан бирле Абзан районының 700-ҙән артыҡ членды иҫәпкә алған Досарм ойошмаһының эш бөтөнләй һүнде. Иптәш Идрисовтың беҙҙең районға килгәне лә юҡ.

Был ғәмһеҙлек күпме дауам итер икән!

Б. Ишниязин.

Райком докладсыларының эше

Ҡыйғы районы партия ойошмаһының XI конференцияһы ВКП(б) райкомының докладсылар һәм лекторҙар группаһы менән етерлек етәкселек итмәүен һәм докладсыларҙың халыҡ араһында йөкмәткеле докладтар һәм лекциялар менән һирәк сығыш яһауҙарын айырыуса билдәләп киткәйне.

Райком бюроһы конференция ҡарарын үтәү өсөн көрәшеп докладсылар һәм лекторҙар менән эшләүҙе яҡшыртыу сараларын күрҙе. Бюро ултырышында 30 кешенән докладсылар һәм лекторҙар группаһы раҫланды. Уның составында райком секретарҙәре, бюро члендәре, партия активе, уҡытыусылар, агрономдар һәм башҡалар бар.

Хәҙер партия райкомы докладсылар менән эште байтаҡ йәнләндерҙе. Улар өсөн биш тапҡыр берәр көнлөк семинар үткәрелде. Унда: «Сталинсе Конституция — донъяла иң демократик конституция», «Колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу», «Марксизм һәм милли мәсьәлә», «Марксизм һәм дин», «Яҙғы сәсеү ваҡытында политик-массовый эште ойоштороу» һәм башҡа темаларға лекциялар һәм докладтар уҡылды.

Быйыл докладсылар 268 доклад һәм лекция уҡынылар. Был докладтарҙы 32.400 кеше тыңланы. Шул докладтарҙың 210-ы колхоздарҙа үткәрелде.

Доклад һәм лекцияларҙың темалары төрлө-төрлө булды. Партия тарихе һәм марксизм-ленинизм мәсьәләләренә 44 доклад, СССР Конституцияһы һәм Совет демократияһы темаһына — 26, колхоз ҡоролошо темаһына — 63, социалистик ярыш хаҡында — 31, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре тураһында — 16, биш йыллыҡ пландың үтәлеш йомғаҡтары тураһында 26 һәм фәнни-атеистик темаларға 20 доклад һәм лекция уҡылды. Лекторҙар һәм докладсыларҙың тезистәре ВКП(б) райкомында алдан тикшерелде.

Күпселек лекторҙар һәм докладсылар даими рәүештә сығыш яһай башланылар. Мәҫәлән, ВКП(б) райкомы секретары иптәш Ғ. Аллаяров быйыл 21 доклад һәм лекция уҡыны. Ул «Пәштәр араһында идеология эшенең торошо», «И. В. Сталиндең тормош юлы һәм эшмәкәрлеге», «В. И. Лениндең «Ни эшләргә?» тигән китабы тураһында», «Марксизм-ленинизм дин тураһында», «Марксизм һәм милли мәсьәлә», «Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың үтәлеш йомғаҡтары», «Большевистик агитацияның төп һыҙаттары» һәм башҡа темаларға тулы әҙерлек менән сығыш яһаны. Уның докладтарын һәм лекцияларын 3400 кеше тыңланы. Докладтарҙан һуң 200-гә яҡын һорау бирелде.

Докладсыларҙан: К. Зиан — 16 тапҡыр, П. Рожков — 16, район театры директоры Ә. Сәхәүетдинов — 12, район прокуроры Ә. Нуғаев — 10 тапҡыр халыҡ араһында сығыш яһаны.

Зиннат Вәлиев,

Ҡыйғы район газетаһы редакторы.

Пландан тыш торф

Баймаҡ торф участкаһы коллективе быйылғы сезонда үҙенең эшен, үткән йылға ҡарағанда, яҡшы әҙерлектәр менән башланы. Һәр бер уң көнлөк задание арттырып үтәлә. Торф кирбесенең сифаты ла, элекке менән сағыштырғанда, байтаҡ яҡшырҙы. Ул махсус штабелдәргә һалып киптерелә. Шулай уҡ уны өйгән урында ла яҡшы тәртип урынлаштырылды.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренә арналған ярышта ҡатнашыусыларҙың һаны артыу менән бергә, стахановсыларҙың да һаны көндән-көн үҫә бара. Улар араһында Ямашев, Рәхимов, Дәүләтбаев, Күсәбаева, Рамазанов, Жерякова, Янтилин һәм башҡа иптәштәр заданиеларен икеләс тапҡырға арттырып үтәйҙәр. Иптәш Рамазанов һәр көндә 2800 урынына 7170 дана юғары сифатлы торф кирбесе әҙерләй, иптәш Жерякова 6300 урынына һәр көндө 15.410 дана торф кирбесе өйә.

Май айы планы срогынан алда уңышлы үтәлде. Майҙа 8000 тонна торф әҙерләү планын срогынан 12 көн алда 8860 тонна итеп үтәнек. Беҙҙең коллектив ике ай ваҡыт эсендә пландан тыш 190 мең һум экономия яһаны. Был бөйөк төҙөлештәргә вклад булып тора.

К. Андриянов,

Баймаҡ торф участкаһы начальнигы.

Йәш специалистәр

Ошо көндәрҙә нефть эшкәртеү заводынан 11 кеше нефтселәрҙең кискә техникумын тамамлап сыҡты. Улар производствонан айырылмайынса уҡып, диплом заданиеларен уңышлы үтәнеләр һәм нефть, газ эшкәртеү буйынса техник-технолог исемдәрен алдылар. Стахановсы оператор Казанцев, Алферов, установка начальнигы Першин, электриктәр Речинский һәм Лосев, мастер Ульянов иптәштәр техникумды *отлично һәм яҡшы* билдәләре менән тамамланылар.

Кадрҙарҙың теоретик кимәлдәрен күтәреү—мөһим бурыс

Балтач район партия ойошмаһы ВКП(б) Үҙәк Комитетының күрһәтмәләрен, өлкә партия активе, район партия конференцияһы ҡарарҙарын эҙмә-эҙлекле рәүештә үтәй барып, 1950—1951 уҡыу йылында партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙар, партия-пропагандаһы мәсьәләләрен иғтибар үҙәгендә тотоп эш итте. Ағымдағы йылда районда 15 политик мәктәп, «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса 27, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 9 түңәрәк һәм кискә партия мәктәбе эшләне. Бөтә тәр партия уҡыуҙарына район коммунистарының 98 проценте йәлеп ителде. Бынан тыш комсомол мәғарифе селтәрендә лә уҡыуҙар ууҙарылды. Партия һәм комсомол мәғарифе селтәрендә бөтәһе 2 мең коммунист, комсомолец һәм партияһыҙ актив уҡыны.

ВКП(б) райкомы һәм партияның тәүге ойошмалары занятиеларҙы юғары идея-политик кимәлдә, төрөн әстәлекле итеп, коммунистарҙың актив ҡатнашлығында үткәрелеүҙәренә, ленинизм нигеҙҙәрен үҙ алдарына өйрәнеүселәрҙең индивидуаль планларын ниеҫ үтәүҙәренә ныҡлы контроллек итәләр.

Йомғаҡлау занятиеларының һөҙөмтәләре уҡыуҙарҙың план нигеҙендә, ҙур ойошҡанлыҡ менән үткәрелеүе быйыл район партия ойошмаһының партия һәм комсомол мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙың сифатын күтәреүҙә иғтибар үҙәгендә тотҡанлығы, пропагандист кадрҙарын һайлауҙы дөрөҫ ойоштороғанлығы тураһында һөйләйҙәр. Быйыл партия мәғарифе селтәрендә 51 пропагандист эшләне. Уларҙың 90 проценте юғары, тамамланмаған юғары һәм урта белемлеләр. ВКП(б) райкомы даими хәрәкәт итеүсе семинарҙар үткәреү юлы менән пропагандистарҙың идея-политик кимәлдәрен, теоретик әҙерлектәрен күтәреүҙе ойоштороу. 1950—1951 уҡыу йылында даими хәрәкәт итеүсе 5 семинар эшләне. Был семинарҙарҙың һәр ҡайһыһында 8-әр занятие үткәрелде. Бынан тыш, пропагандистар менән тәжрибә уртаҡлашыу кәңәшмәләре уҙғарылды. Партия пропагандаһы мәсьәләләре һәм айырым пропагандистарҙың отчеттары бюро ултырышында, райком пленумдарында һәм район активе йыйылыштарында тикшерелде. Бюро ултырышында 15 тәүге ойошма секретары, 16 түңәрәк етәксеһенең отчеттары тыңланды. Пропаганда һәм агитация бүлеге работниктәре 13 политик мәктәп һәм 27 түңәрәктең эшен тикшерҙеләр, уларға конкрет методик күрһәтмәләр бирҙеләр, практик ярҙам күрһәттеләр.

Ағымдағы уҡыу йылында 160 коммунист «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын», 12 коммунист марксизм-ленинизм әҫәрҙәрен үҙ алдарына өйрәнделәр. Уларға ярҙамға ВКП(б) райкомы бюроһы ултырышы ҡарары менән 33 консультант беркетелде. Теоретик беседаларҙан башҡа үҙ алдарына эшләүселәр өсөн 197 лекция уҡылды. Бынан тыш, ике урында лекциялар уҡыу циклы ойошторолдо. Бында «Коммунистар партияһының манифесы», В. И. Лениндең «Ни эшләргә?», «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа», «Демократик революцияла социал демократтарҙың ике тактикаһы», И. В. Сталиндең «Марксизм һәм милли мәсьәлә» һәм башҡа әҫәрҙәре буйынса бөтәһе 34 лекция уҡылды.

Ауыл интеллигенцияһын марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен һәм ВКП(б) тарихен өйрәнеүгә йәлеп итеү буйынса ла күп кенә эштәр башҡарылды. Уҡытыусыларҙан 393 кеше, ауыл хужалығы специалистарынан — 25, медицина работниктәренән — 17 кеше ВКП(б) тарихен үҙ алдарына өйрәнделәр. Йомғаҡлау беседаларында Курач, Юғары Ҡарыш, Урта, Түбән Ҡарыш һәм Яңы Сикияз ете йыллыҡ мәктәп уҡытыусылары яҡшы өлгәшеүҙәр күрһәттеләр. Консультант, Юғары Ҡарыш урта мәктәбе директоры иптәш Рафиков, мәҫәлән, үҙенең эшен марксизм-ленинизм теорияларын үҙ алдарына өйрәнеүсе уҡытыусыларҙан личный пландарын талап итеү, уларға план төҙөргә ярҙам итеүҙән башлап ебәргән. Һәр уҡытыусы ла үҙенең политик белемен күтәреүҙе ошо план нигеҙендә алып барған. Йомғаҡлау беседаларында был мәктәп уҡытыусыларының яҡшы өлгәшкәнлектәре беленде. Уҡытыусы Шамилова, Алкаев, Тараканова һәм башҡа иптәштәр айырыуса яҡшы өлгәшкәнлектәрен күрһәттеләр.

Партия мәғарифе селтәрендә йомғаҡлау занятиелары бик әһәмиәтле урын алып торалар. Уларҙың маҡсаты коммунистарҙың политик белем кимәлдәрен, үтелгән материалдарҙы практик тормош менән ниеҫ итеп бәйләй алыуҙарын асыҡлау менән бергә, ВКП(б) члендарына һәм кандидаттарына түңәрәктәрҙә һәм политмәктәптәрҙә алынған белемдәрҙе беркетергә, марксизм-ленинизм теорияһын тағы ла тырышыбыраҡ өйрәнергә ярҙам итеүҙән тора. Йомғаҡлау занятиелары түңәрәктәрҙә һәм политмәктәптәрҙә уҡытыусыларҙың, шулай уҡ марксизм-ленинизм теорияһын үҙлегенән өйрәнеүселәрҙең үтелгән материалдарҙы ниеҫ үҙләштереүҙәрен, белем кимәлдәрен тикшереү менән бер рәттән, пропагандистарҙың, консультанттарҙың һәм шулай уҡ партияның тәүге ойошмаларының эшенә лә серьез һынау булып тора. Шуға күрә партия райкомы һәр бер түңәрәк һәм политмәктәптең эшендә булған үҙенсәлектәрҙе иҫкә алып, йомғаҡлау занятиеларын үткәреү буйынса алдан уҡ махсус план төҙөне һәм уны ВКП(б) райкомы бюроһында, политмәктәп, түңәрәк етәкселәре, консультанттар кәңәшмәһендә, партияның тәүге ойошмаларында тикшерҙе. ВКП(б) райкомы политмәктәптәрҙә һәм түңәрәктәрҙә үткән темаларҙы ҡабатлауҙы һәм тыңлаусылар өсөн консультациялар үткәреүҙе ойоштороу буйынса 21 апрелдә уҡ тәүге партия ойошмаһы секретарҙарының кәңәшмәһен үткәрҙе. Партия кабинеты урындарға сығып лекциялар уҡыуҙы, консультацияларҙы ойоштороҙо.

Партия һәм комсомол мәғарифе системаһында уҡыуҙар быйыл уҙған йылдарға сағыштырғанда ойошҡаныраҡ һәм коммунистарҙың актив ҡатнашлығында алып барылды. Һәр бер коммунистың марксизм-ленинизм учениеһын төрән үҙләштереүенә ирешелде. Программа буйынса билдәләнгән материалды ашығып үтеүгә һәм быны менән уҡыуҙың сифатын түбәнәйтеүгә, тыңлаусыларҙың большевизм теорияһын үҙләштереүгә булған ҡыҙыҡһыныуҙарын кәметеүгә юл ҡуйылманы. «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса 25 түңәрәк һәм 15 политмәктәп, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 9 түңәрәк уҡыу йылын уңышлы тамамланылар. «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса Фрунзе исемендәге, «Путь коммунизма» колхоздарының партия ойошмалары эргәһендәге түңәрәктәр, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса Карл Маркс, Куйбышев исемендәге, «Правда» колхоздарының партия ойошмалары эргәһендәге түңәрәктәрҙә тыңлаусылар айырыуса матур күрһәткестәр бирҙеләр. Был колхоздарҙа политик уҡыу мәсьәләләре һәр ваҡыт партия ойошмаһының иғтибар үҙәгендә торҙо. Уҡыу йылында был мәсьәлә 4-5 тапҡыр партия йыйылыштарында тикшерелде. Пропагандистар Тимершин, Саяпов, Фахразиев, Акамов, Хәмәтнуров иптәштәр нәүбәттәге занятиеларға төрөн әҙерлек менән килеләр. Коммунистарҙың партия уҡыуҙары район партия ойошмаһына партия-политик эштең кимәлен тағы ла күтәреүҙә ҙур ярҙам күрһәтте. Коммунистарҙың производство активлектәре байтаҡ артты. Фрунзе исемендәге колхоз партия ойошмаһы эргәһендәге түңәрәккә бына нисе икенсе йыл иптәш Тимершин етәкселек итте. Түңәрәктә 12 коммунист уҡыны. Түңәрәктә 2 йыл эшләү дәүерендә бер генә тапҡыр ҙа занятиеларҙы өҙөү факттары булманы. Иптәш Тимершин һәр ваҡыт программаны үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үтергә тырышты. Коммунистар үҙҙәренең политик белем кимәлдәрен арттырып, политик-массовый эштә лә актив ҡатнаша башланылар. Был түңәрәк коммунистары колхоз производствоһының иң хәл иткес участкаларында эшләйҙәр, авангардлыҡ ролен тәьмин итәләр. БАССР Верховный Советы депутаты коммунист Шәнгәрәев колхоз председателе, Ниҙамов — агротехник, Камалиев — ферма мөдире, Уилданов — бригадир. Был иптәштәр политик белемдәрен күтәреү менән бер рәттән, үҙҙәренә тапшырылған эште лә намыҫ һәм большевистик дөрөҫлөк менән башҡаралар. Иптәш Шәнгәрәев етәкселек иткән колхоз районда иң алдынғы колхоздарҙың береһе иҫәпләнә, иптәш Камалиев етәкселегендәге ферма күп кенә малсылыҡ фермаларына өлгө булырлыҡ, иптәш Уилданов бригадаһы быйыл яҙғы сәсеүҙе районда беренсе булып тамамланы.

Һанап сығылған ыңғай факттар менән бер рәттән, партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙарҙың ҡуйылышында беҙҙә серьез кәмселектәргә лә юл ҡуйылды. Ҡайһы бер түңәрәктәрҙә занятиелар түбән идея-политик кимәлдә үткәрелделәр. Был бигерәк тә, «Октябрь», Матросов исемендәге колхоз партия ойошмалары эргәһендәге түңәрәктәрҙә йышыраҡ булды. Был хәл беҙгә түңәрәк һәм политмәктәптәрҙе пропагандист кадрҙары менән комплектовать иткәндә айырыуса ҙур иғтибар бирергә кәрәклеген күрһәтте. Күп кенә тәүге партия ойошмаһы секретарҙәре партия уҡыуына колхоз һәм ауыл Советы председателдәрен йәлеп итмәгәндәр. Шаяҙы ауыл Советы председателе Вәлетдинов, колхоз председателдәре Сағманов, Ғилмияров иптәштәр контролһеҙлектән файҙаланып күп кенә занятиеларға ҡатнашмағандар.

Куйбышев исемендәге колхоздың партия ойошмаһы эргәһендәге И. В. Сталиндың биографияһын өйрәнеү түңәрәге тураһында ла бер нисә һүҙ әйтергә кәрәк. Уҡыу йылы башланыуҙың беренсе ике айында был түңәрәк занятиеларына йөрөш бик түбән булды. 10 тыңлаусы урынына занятиеларҙа 5-6 тыңлаусы ҡатнашты. Партияның тәүге ойошмаһы секретары иптәш Усманов был хәлгә килешеп ҡараны. ВКП(б) райкомы бюроһы иптәш Усмановтың отчетын тыңларға мәжбүр булды. Шунан һуң ғына түңәрәктең эше йәнләндерелде. Йомғаҡлау занятиеларында тыңлаусылар яҡшы өлгәшкәнлектәрен күрһәттеләр.

Хәҙер районның бөтә тәүге партия ойошмаларында ла уҡыу йылын йомғаҡлау һөҙөмтәләре тикшерелә һәм яңы уҡыу йылына әҙерлек эштәре алып барыла.

Д. Ғәлимов,

ВКП(б)-ның Балтач райкомы секретары.

КОЛХОЗ ЭКОНОМИКАҺЫ ТЕМАҺЫНА

Учет—артель хужалығы менән идара итеүҙә ҡеүәтле рычаг

Учет — эре общественный хужалыҡ менән планлы етәкселек итеү ҡоралы, общественный милекте файҙаланыу һәм һаҡлау торошона контроллек итеү средствоһы ул. В. И. Ленин социализмда учеттың айырыуса роле тураһында һәр ваҡыт күрһәтә килде. **«Социализм — бөтәһенән элек учет ул»**, тип өйрәтте В. И. Ленин. Ул, буржуазия власен ҡолатыу менән үк, **«бер генә изделие ла, бер генә ҡаҙаҡ икмәк тә учеттан тышта ҡалырға тейеш түгеллеге»** тураһында яҙҙы.

И. В. Сталин учет тураһында, социализм иленең экономик тормошонда учеттың роле һәм әһәмиәте тураһында В. И. Лениндең учениеһен артабан үҫтерҙе. Беҙҙә, эре социалистик хужалыҡта учет ҙур хәрәкәт иттереүсе көс булып баҫты. Социалистик учет, халыҡ хужалығы планы үтәлешенең барышын сағылдырғаны һәм контроллек иткәнә хәлдә, социализм иленең хужалыҡ тормошо үҫешенә булышлыҡ итә һәм шуға күрә ул хужалыҡ менән идара итеүҙә иң әһәмиәтле инструменттарҙың береһе булып тора. Социализмда учеттың әһәмиәте тураһында иптәш Сталин былай тине: «дөрөҫ ҡуйылған учеттан башҡа бер ниндәй ҙә төҙөлөш эшен, бер ниндәй ҙә государство эшен, бер ниндәй ҙә план эшен уйға килтерергә лә мөмкин түгел».

Колхоз — эре общественный хужалыҡ. Тимәк уны планһыҙ һәм учетһыҙ алып барыуы мөмкин түгел. Бына шуға күрә лә 1931 йылдың июнендә ВКП(б) Үҙәк Комитетенең пленумы **«эре хужалыҡ булыуы яғынан колхоздың учетһыҙ йәшәүе мөмкин түгел»**, тип күрһәтте. Бынан һуң да партия һәм хөкүмәт колхозда учет һәм отчет биреү эшенә ғәйәт ҙур әһәмиәт бирен килләр. Был тәбиғи, сөнки колхоздағы дөрөҫ ҡуйылған учет общественный байлыҡтарҙы тыуҙырыусы кешеләрҙең эш һөҙөмтәләрен асыҡ сағылдырырға, һәм артель доходтарын хеҙмәт көндәре буйынса дөрөҫ бүлергә мөмкинлек бирә. Дөрөҫ ҡуйылған учет колхоздың бөтә производство тормошон көҙгөләй күрһәтеп тора, эштәге кәмселектәрҙе асырға һәм бөтөрөргә ярҙам итә, артелдең общественный хужалығы үҫешенең перспективаларын күрһәтә.

Большевиктәр партияһы һәм Совет хөкүмәте учет работниктәре кадрҙары тураһында, уларҙы әҙерләүҙе яҡшыртыу, артелдең хужалыҡ-финанс эшмәкәрлегендә колхоз счетоводы, бухгалтеренең ролен күтәреү тураһында даими рәүештә хәстәрлек күрәләр. Учет эшен алып барыу өсөн колхоздар һәр төрлө кенәгәләр һәм бланкылар менән тәьмин ителгәндәр, колхоз учетының квалификациялы кадрҙарын әҙерләүҙә, финанс хужалығын юлға һалыуҙа ҙур ярҙам алалар.

Колхозсылар үҙ эшен намыҫ менән башҡарыусы учет работниктәрен юғары баһалайҙар, уларҙың хеҙмәтен достойн рәүештә билдәләйҙәр. Колхоз стройы йылдарында республика колхоздарында йөҙҙәрсә шундай тәжрибәле һәм үҙ эшен һөйөп башҡарыусы счетоводтар үҫеп етеште. Учет эшен дөрөҫ ҡуйыу, үҙ эштәрен намыҫлы башҡарыу менән улар хужалыҡ менән етәкселектә артель правлениеларына һәм председателдәренә бик ҙур ярҙам күрһәтәләр. Ундайҙар иҫәбенән Хәйбулла районының «Ҡыҙыл Байраҡ» колхозы бухгалтеры иптәш Ф. Резаевты күрһәтергә мөмкин. Ул учет эшен өлгөлө рәүештә алып бара. Бында һәр нәмә, аҡса, продукт, материал, хеҙмәт көнө һәр ваҡыт иҫәптә, колхоз милкен әрәм-шәрәм итеүгә юл ҡуйылмай. Шунлыҡтан да бында учет общественный милектең артыуына булышлыҡ итә. Мәҫәлән, колхоз үҙған йыл бөртөклө ашлыҡтың һәр гектарынан 13,45 центнер урожай алып, районда икенсе урынға сыҡты. Аҡсаға күсереп иҫәпләгәндә, колхоздың дөйөм доходы 371 мең һум тәшкил итте. Был, планда ҡаралғандан 30 мең һумға артыҡ, йәки 1949 йылдағы доходтан ике ярым тапҡыр артыҡ тигән һүҙ. Бында продукт һәм материалдар һаҡлыҡ менән тотола. Һәр бер килограм материалды тотоноу документ менән раҫлана. Бына шуның арҡаһында ла бында үҙған йыл ауыл хужалығы инвентарҙарын ремонтлауҙа һәм сырье һатып алыуҙа 7 мең һум экономия яһанылар. Бындай миҫалдарҙы байтаҡ килтерергә мөмкин.

Ләкин республика колхоздарының байтаҡ өлөшөндә учет эше юлға һалынмаған. БАССР Ауыл хужалығы министерствоһы колхоздар өсөн учет работниктәре әҙерләү эше менән насар шөғөлләнә. Дөрөҫ, Учкомбинаттың Өфө, Бөрө, Стәрлетамаҡ һәм Бәләбәй филиалдары был өлкәлә бер ни тиклем эш алып баралар. Ләкин уларҙа ла ни бары 100 самаһы кеше уҡый. Ә СССР Ауыл хужалығы министерствоһы эргәһендәге ситтән тороп уҡыу курстарында республиканан 1500 кеше урынына бары тик 998 кеше уҡыған. Уларҙың да 400-ләбе ябай системалағы учет буйынса әҙерләнгән. Шул уҡ ваҡытта эреләтелгән колхоздар ҡатмарлы системалағы учетҡа күстеләр.

Күп кенә район ауыл хужалығы бүлектәре эргәһендәге бухгалтерия-инструкторлыҡ аппараты колхоздарҙа учет эшен яҡшыртыу менән шөғөлләнмәй.

Стәрлетамаҡ һәм Өфө район ауыл хужалығы бүлектәре эргәһендәге инструктор-бухгалтерия аппараттары ла үҙ бурыстарын насар үтәйҙәр. Стәрлетамаҡ районының байтаҡ колхоздарында учет эше буталған. Ә инструктор-бухгалтерҙар етерлек тиклем квалификациялы түгелдәр. Өфө районы колхоздарында һис колхоз учетын бөтөнләй һанға һуҡмайҙар. Бында тик һуңғы ике йыл эсендә генә лә 5—6 инструктор-бухгалтер алышынған. Шулай булғас бындай аппарат колхоз учетын яҡшыртыуға ниндәй йоғонто яһай алһын.

Колхозда иҫәп-хисап эштәрен юлға һалыуҙа артелдең ревизия комиссиялары ҙур эш башҡара алалар. Ләкин улар әле бөтә урында ла яҡшы эшләмәйҙәр. Ревкомиссия председателдәре йыш ҡына алышынып тора. Ревизия эштәренең насар ҡуйылышынан файҙаланып ҡайһы бер урындарҙа колхоздың аҡса һәм материаль средстволары контролһеҙ тотола, колхоздың общественный фондтары тейешенсә учетҡа алынмай. Мәҫәлән, Өфө районы Каганович исемендәге колхоздың керем-сығым сметаһы буйынса производство кәрәгенә 78 мең һум ҡаралған, фактик алғанда 162 мең 700 һум тотолған. Ә шул уҡ ваҡытта керем-сығым сметаһының доход өлөшө арттырып үтәлгән. Контролһеҙ тотоноу арҡаһында колхозсыларға хеҙмәт көнөнә тейешле булған 13 мең һумды бирен бөтөрмәгәндәр.

Республиканың ауыл хужалығы органдары колхоздарҙа учет эшен юлға һалыу өсөн бөтә кәрәкле сараларҙы күрергә бурыслылар. Колхозсыларҙың яҙғы һәм йөйгә осорҙа хеҙмәт көндәрен дөрөҫ иҫәпкә алыу ҙур әһәмиәткә эйә. Бында колхоз счетоводтарының һәм председателдәренең бурысы — колхоз бригадирҙарын һәм трактор бригадаларының учетчик-заправщиктарын эште нисек дөрөҫ үлсәргә, хеҙмәт көнөн нисек иҫәпләп сығырға, ведомостька һәм колхозсыларҙың хеҙмәт кенәгәләренә нисек яҙырға өйрәтеү.

Урындағы партия һәм совет ойошмалары колхоздарҙың бөтә эшмәкәрлектәре өсөн серьез яуаплылыҡ алып баралар. Улар колхоздар менән етәкселек кимәлен күтәреүгә бурыслылар. Был «бөтәһенән элек колхоз кадрҙарын дөрөҫ һайлап алыу, уларға практик эштәрендә, уларҙың идея-политик һәм эш квалификацияларын күтәреүҙә көндәлек ярҙам күрһәтеү. Партия органдары колхоз кадрҙарын государство дисциплинаһын һәм ауыл хужалығы артеле Уставын ныҡ һаҡлау рухында, большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит рухында, эштә юғары талапсанлыҡ рухында тәрбиәләргә, уларға общественный хеҙмәтте һәм производствоны ойоштороу нигеҙҙәренә, шулай уҡ алдынғы агрономия фәне өлгәшеүҙәренә эйә булырға ярҙам итергә тейештәр» («Правда»). Бындай ярҙамға колхоз учеты работниктәре айырыуса мохтаждар. Бына шуға күрә партияның колхоздарҙағы тәүге ойошмалары колхозда учет эше ҡуйылышын башҡа бурыстар менән бер рәттән иғтибар үҙәгенә алырға бурыслылар.

Г. Баян.

Колхоз урмандарын файҙаланыуҙа ныҡлы тәртип булдырырға

Партия һәм хөкүмәтебеҙ колхоз урмандарын һаҡлау һәм уларҙы файҙаланыуҙы тәртипкә һалыуға ҙур иғтибар бирә. Колхоз урмандарын дөрөҫ файҙаланыу, киҫенте урындарҙы үҙ ваҡытында таҙартыу, урмандарҙы рөхсәтһеҙ ҡырҡыуға һәм малдарҙан тапатыуға юл ҡуймау һәм янғындан һаҡлау өсөн мөһим саралар билдәләнде.

1950 йылда лесхоз һәм лесничестволар көсө менән республикабыҙҙа 40 мең гектар майҙанда колхоз урмандары тәртипкә һалынды.

Күп кенә колхоз правлениелары, район ауыл хужалығы бүлектәре урман һаҡлауҙы һәм унда тәртип индереүҙе байтаҡ яҡшырттылар. Ағас ҡырҡыуҙарҙы билдәләнгән срогтарҙа һәм тейешле урындарҙа ғына алып барҙылар. Колхоз урмандарынан ағастар ебәреү һәм ҡырҡылған урындарҙы үҙ ваҡытында таҙартыу эштәре лә юлға һалынды. 1950 йылда таҙартылмаған урман майҙандары, 1949 йылға сағыштырғанда 3 тапҡырға кәмене; короедтарҙан зарарланған урмандарҙың майҙаны байтаҡ кәмене һәм рөхсәтһеҙ урман ҡырҡыуҙар аҙайҙы. Колхоз председателдәре урмандарҙы һаҡлауҙы тәртипкә һалыу буйынса һәм тәртип боҙоусыларға ҡарата ҡиҫкен сара күреүгә ҙур иғтибар бирҙеләр һәм үҙҙәрен яуаплыраҡ һиҙә башланылар.

Был сараларҙы үткәреүҙә урман хужалығы Управлениеһенең лесхоздары һәм лесничестволары ҙур ярҙам күрһәттеләр.

Ләкин шуны әйтергә кәрәк, колхоз урмандарына тәртип индереүҙе яҡшыртыуҙар менән бергә, был мөһим мәсьәләгә тейешле иғтибар бирмәүсе күп кенә районлар ҙа бар әле. Мәҫәлән, Хәйбулла, Маҡар һәм Учалы районларының ҡайһы бер колхоздарында урмандарҙа тәртип боҙоуҙарға юл ҡуялар һәм аҙ көндәрҙе урмандарҙы янғындан һаҡлауға тейешле иғтибар бирмәйҙәр.

Ҡариҙел районының «Заря», «Свобода», «Победитель», «Заветы Ильича», «Большевик» һәм Стаханов исемендәге колхоздарында тейешһеҙ урындан ағастарҙы ҡырҡыуға юл ҡуйылған. Бындай серьез етешһеҙлектәрҙе район Советы һәм район ауыл хужалығы бүлеге белә тороп та бер ниндәй ҙә сара күрмәнеләр.

Йылайыр, Маҡар, Баҡалы, Күгәрсен, Йомағужа, Стәрлетамаҡ, Федоровка һәм Стәрлебаш районларының колхоздарында лесниктәр билдәләнмәгән һәм урмандарҙы һаҡлау тейешенсә ойошторолмаған.

Был районларҙа колхоз правлениелары, район ауыл хужалығы бүлектәре колхоз урмандарының хужалыҡ мәсьәләһе менән ҡыҙыҡһынмайҙар һәм илебеҙ өсөн ҡиммәтле булған ағастарҙы һәләк итеүгә юл ҡуялар.

Ваҡ колхоздар эре ауыл хужалығы артелдәренә берләшеү айҡанлы, колхоздарға тәжрибәле етәкселәр килделәр. Улар колхоз урмандарын дөрөҫ файҙаланыуҙы тәьмин итергә тейештәр.

Государство урман фондтарын файҙаланыуҙа ныҡлы тәртип булдырған кеүек үк, колхоз урмандарын файҙаланыуҙы ла юлға һалырға кәрәк.

Н. Артемьев,

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советенең урман хужалығы һәм урман промышленносе группаһының өлкән инструкторы.

Ауыл Советы председателе трибунаһы

Ауыл Советы һәм депутаттар

Беҙҙең Учалы ауыл Советы район үҙәгендә урынлашҡан. Район үҙәгендәге ауыл Советтарына ҡарағанда, [illegible] Ул территорияһы [illegible] общественный, совет, хужалыҡ ойошмаларының хеҙмәткәрҙәре.

Был ойошмаларҙың эшләүсе хеҙмәткәрҙәр менән көндәлек бәйләнеште тотоп, улар ярҙамында киң күләмдә массовый-ағартыу эше алып бара.

Район учреждениеларында беҙҙең күп кенә депутаттарыбыҙ эшләйҙәр. Депутат Исламов район ауыл хужалығы бүлегендә агроном булып эшләй. Шул уҡ ваҡытта ул ауыл Советының ауыл хужалығы даими комиссияһы менән етәкселек итә. Ауыл Советы сессияларында, утырыштарында ҡаралған һәр бер ауыл хужалығы мәсьәләһе буйынса ошо комиссия ярҙамында әҙерләнә, һәм шул уҡ комиссия ҡарағанда [illegible] ойошторола.

Ауыл Советы депутаты иптәш Ғарипов район мәғариф бүлеге мөдире булып эшләү менән бергә, ауыл Советендәге даими культура-ағартыу комиссияһы етәксеһе итә. Иптәш Ғарипов уҡытыусылар, культура работниктары менән көндәлек бәйләнеште [illegible]. Был комиссия ауылда культура-ағартыу сараларын ойоштора. Уның ярҙамында беҙ ауыл Советы сессияһында [illegible] уҡыу торошо мәсьәләһен ҡарап үттек.

Үткән хужалыҡ йылында Учалы районы мул урожай үҫтереп алды. Государство алдындағы бурыстарын намыҫ менән үтәне.

Беҙҙең ауыл Советына ингән Учалы МТС-ы үткән йылдағы ыңғай күрһәткестәре өсөн 1951 йылға Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә кандидат итеп билдәләнде. Был МТС-тың механизаторҙары [illegible] депутат, механик [illegible] етәкселегендә үткәрелгән ремонттарҙың сифаты юғары баһа тапты.

Үткән йыл [illegible] район буйынса иң юғары урожай үҫтереп алыуҙа [illegible] Бәхтиәров [illegible] МТС-ы механизаторы Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең патриотик [illegible] яуап [illegible].

Ауыл Советы колхозсылар араһында массовый-ойоштороу сараларын киң күләмдә тормошҡа ашыра. [illegible] Ауыл Советы депутаттары юғары урожай өсөн, [illegible] күтәреү өсөн [illegible]. Депутат Дәүләтбаев етәкселек иткән «Авангард» колхозы район буйынса юғары урожай алыусы [illegible]. Бында колхозсылар мул тормош менән йәшәйҙәр, колхоз бөтә район өсөн юғары сортлы орлоҡ үҫтерә. Иптәш Дәүләтбаев хәҙер трактор бригадаһы менән етәкселек итә.

[illegible]

М. Виладиева,

Учалы районы Учалы ауыл Советы председателе.

Шефлыҡ эше яҡшы ойошторолған

Өфө кабель заводы бер нисә йыл буйына Ҡырмыҫҡалы машина-трактор станцияһына шефлыҡ итеп килә. Заводтың партия бюроһы йыл һайын махсус план төҙөп, уны уңышлы үтәп бара.

Ошо йылдың май айында завод 55 кеше [illegible] башҡорт, татар, рус [illegible] халыҡ йырҙарынан һәм бейеүҙәренән [illegible] сәхнәлә тәүге шеф концертын ойошторҙо. МТС механизаторҙары концертте ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар.

Күптән түгел заводтың алдынғы агитаторҙарынан иптәш Тюрасова МТС-та 12 көн булып, механизаторҙар араһында төрлө темаларға бер нисә беседа уҙғарҙы һәм МТС-тың агитаторҙарына агит-массовый эште ойоштороуҙа конкрет ярҙам күрһәтте.

Ошо көндәрҙә заводтың партия бюроһы машина-трактор станцияһына 500 дана «Боевой листок» макеты әҙерләп, «Почет таҡтаһы» эшләп ебәрҙе.

Июнь айының аҙаҡтарында физкультурниктәр активынан бер нисә кеше МТС-та физкультура эштәрен юлға һалыу өсөн ебәреләсәк.

Хәҙер МТС-ҡа барып үткәреү өсөн халыҡ-ара хәл тураһында доклад һәм ҙур программала концерт әҙерләнә.

Ғ. Идрисов.

ЯЗЫКОВО МТС-ы УРОЖАЙ ЙЫЙНАУҒА ӘҘЕРЛЕКТЕ ӨҘӘ

Языково МТС-ының етәкселәре быйылғы урожай йыйнау эштәренең үҙенсәлектәрен һәм ауырлыҡтарын иҫәпкә алмайҙар. Быйыл, беренсенән, урожай йыйнау эштәре, үҙған йылға ҡарағанда, байтаҡ иртә башланасаҡ. Икенсенән, комбайндар менән урожай йыйнау планы күп артасаҡ. 10 мең гектар майҙанда урожай йыйнау эштәре менән бер үк ваҡытта, һөмөндә 4 мең гектар майҙанда ҡамыл теплтәрен йомшартыу үткәреү бурысы ла тора.

Бына был эштәрҙе башлап ебәреүгә хәҙер айҙан да аҙ ваҡыт ҡалып бара. Ләкин Языково МТС-ы етәкселәре (директоры иптәш Дыбленко, өлкән механик иптәш Наумов) ремонт эштәрен әле булһа ныҡлап башлап ебәрә алғандары юҡ. Ауыл хужалығы эштәрен үткәреүҙә тәүбәтселеккә юл ҡуйыуға күнеккән был етәкселәр тәүҙә тракторҙар паркын ремонтлау, ә унан һуң сәсеү, пар һөрөү эштәре менән шөғөлләнделәр. Ә комбайндар ремонтлауға бары тик май айында ғына башланылар. Запас частәр һәм башҡа ремонт үткәреү өсөн талап ителгән материалдарҙы әҙерләү тураһында алдан хәстәрлек күрмәү, ремонтсыларҙың хеҙмәтен дөрөҫ ойоштормау урожай йыйнауға әҙерлек эштәрен хурлыҡлы рәүештә өҙөүгә килтерҙе. 10 июнгә тиклем бында 20 комбайндың ни бары бишәүһе генә ремонтланған. Ләкин уларҙың береһе лә ошо көнгә тиклем государство комиссияһы тарафынан ҡабул итеп алынмаған. Сөнки МТС етәкселәре «ремонтланған» тип иҫәпләгән һәр бер машинаның теге, йәки был частәре етешмәй. Молотилкаларҙы һәм башҡа урожай йыйнау машиналарын ремонтлау эштәре лә шулай уҡ бик аҡрын темп менән бара.

МТС-тың комбайндар ремонтлауҙа быйылғы хурлыҡлы артта ҡалыуының төп сәбәбе нимәлә һуң? Графиктең үтәлеүе өсөн большевиктарса көрәш ойоштормауында, ремонтта алдынғы методтарҙы ҡулланмауҙа. Бында узел методын түгел, хатта бригадно-узел методын да ҡулланмайҙар. Ремонтсылар хатта был методтың нимә икәнен дә белмәйҙәр.

МТС-тың өлкән механиге иптәш Наумов:

— Беҙ бригадно-узловой методты ҡулланабыҙ, — тип, бик ныҡ ышандырырға тырыша, әлбиттә. Ләкин ул һүҙҙә генә, ә практикала ҡулланылмай.

Бында хатта комбайн моторҙарын ремонтлау буйынса ла айырым узел ойошторолмаған. Был хәл, билдәле, эштең темпына һәм сифатына ныҡ зарар килтерә. Комбайндар буйынса механик иптәш Кузнецов ремонттың сифатына көндәлек контроль алып барыһы урынына, айҙар буйына Өфөлә запас частәр юллап йөрөй.

Эште узловой метод менән ойоштормау хеҙмәт дисциплинаһына ла насар йоғонто яһай. Үҙ машиналарын ремонтлап бөтөргән комбайнерҙар, шулай уҡ уларҙың ярҙамсылары шунда уҡ үҙ ауылдарына ҡайтып китергә ашығалар, һәм үҙ хужалыҡтарында эшләйҙәр. Мәҫәлән, комбайнер Бикмиев Ғәли бына хәҙер 15 көн инде МТС-та эшләмәй, ә үҙенә өй һалыу менән шөғөлләнә.

Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү сараларын күрелмәй. Комбайнерҙар һәм башҡа ремонтсылар үҙҙәренең көндәлек эш нормаларын нисек үтәүҙәрен белмәйҙәр. Нормаларҙың үтәлеше күрһәткес таҡталарына яҙылып барылмай. Өлкән механик иптәш Наумов был эш менән шөғөлләнеүҙе артыҡ мәшәҡәт итеп иҫәпләй.

Ремонтсыларға эшләү һәм йәшәү өсөн тейешле шарттар тыуҙырылмаған. Дөйөм торлаҡ һәм столовой юҡ. Уларҙы булдырыу тураһында МТС етәкселәре уйлап та ҡарамайҙар. Шул сәбәпле комбайнерҙарҙың күпселеге 7—8, хатта 10—15-әр километр алыҫлыҡтағы ауылдарына ҡайтып йөрөргә йәки азналар буйына мастерскойҙа ҡунып йөрөргә мәжбүр булалар. Ошондай шарттарҙа, билдәле, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү тураһында һөйләү файҙаһыҙ.

Бында йығылған ашлыҡтарҙы урып йыйнау өсөн комбайндарҙы махсус ҡулайламалар менән йыһазландырыуға, түңдә һәм лымырҙы шарттарҙа эшләүгә әҙерләүгә, комбайндарҙы һалам йыйғыстар, лущильниктәр менән тәьмин итеүгә лә тейешле иғтибар бирелмәй.

Үҙған йыл МТС хеҙмәтләндергән колхоздар урожай йыйнауға һәм государствоға иген тапшырыуға насар әҙерләнделәр. Иген таҙартыу машиналарын һәм иген киптергестәрҙе ваҡытында әҙерләмәү һәм уларҙы насар файҙаланыу һөҙөмтәһендә колхоз ырҙындарында меңәрләгән бот иген таҙартылмай һәм киптерелмәй ятҡыртылды һәм был бик күп игендең боҙолоуына килтерҙе. МТС һәм колхоз етәкселәре үҙған йылдың әсе һабаҡтарынан әле булһа үҙҙәренә тейешле һығымта яһамағандар. Быйыл да шул уҡ хаталарҙы ҡабатлайҙар. МТС зонаһында Чкалов исемендәге ауыл хужалығы артеленән башҡа бер генә колхозда ла Гоголев системаһындағы иген киптергес юҡ.

«Победа» колхозы районда иң ҙур хужалыҡтарҙан иҫәпләнә. Уның бойҙай сәсеү майҙаны ғына ла 4 мең гектарҙан арта. Бында үҙған йыл уҡ инде иген киптергес төҙөлә башлағайны. Ләкин уны төҙөү әле булһа тамамланмаған.

Сталин исемендәге колхозда үҙған йыл иген таҙартыу машиналарының етешмәүе һәм иген киптергестең булмауы һөҙөмтәһендә генә меңәрләгән центнер иген серәп әрәм булды һәм шул арҡала ғына колхоз Тыуған ил алдында ҙур бурыслы булып ҡалды һәм колхозсылар үҙҙәренең хеҙмәт көндәренә тейешле игенде ала алманылар. Шул уҡ ваҡытта ике мең ярым центнерҙан артыҡ орлоҡ сәсеүгә яраҡһыҙ булып сыҡты.

Быйыл был колхозға «Ирек», «Путь Ленина» колхоздары ҡушылдылар. Ошо айҡанлы урожай йыйнау планы ла бик күп артты. Был хәл колхоз етәкселәренән урожай йыйнауға һәм государствоға иген тапшырыуға һәр яҡлап өнтекле әҙерлекте талап итә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, колхозда урожай йыйнауға әҙерлек эштәре бик һүлпән бара. Был колхозда үҙған йылдарҙа уҡ инде Гоголев системаһында иген киптергес төҙөү планлаштырылған. Ләкин, колхоз етәкселәре, һәр төрлө объектив сәбәптәргә һылтанып, әле булһа уны төҙөүгә башламағандар. Иген таҙартыу машиналары менән дә эш шулай уҡ насар тора. Ни бары бер урында япмалы ырҙын төҙөлгән. Ләкин уның да әле башы ябылмаған. Был колхозда ла, районлың башҡа колхоздарындағы кеүек үк, ҡояшлы көндәргә генә иҫәп тоталар. Колхоз председателе иптәш Бикмиевтең бөтә ышанысы комбайндарҙа, ул хатта иген таҙартыуҙы ла комбайндар менән башҡарырға иҫәп тота.

МТС зонаһындағы колхоздарҙа быйыл бөтәһе 26 урында иген киптергес төҙәләргә тейеш ине. Ләкин МТС етәкселәре был эш менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмайҙар һәм төҙөлөш эштәрендә колхоздарға практик ярҙам күрһәтмәйҙәр.

МТС директоры иптәш Дыбленко:

— Был турала колхоздарға тейешле күрһәтмә бирелгән инде, ҡалғаны улар эше, — тип, был государство әһәмиәтендәге эште үтәүгә ситтән тыш яуапһыҙ ҡарай.

Языково МТС-ы механизаторҙары һәм был зоналағы ауыл хужалығы артелдәре члендәре бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хаттарында быйыл тотош майҙандарҙа юғары урожай үҫтереп алырға, ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарында ҙур уңыштарға өлгәшергә, урожайҙы ваҡытында юғалтыуһыҙ йыйнап алырға, һәм Тыуған ил алдындағы бурыстарҙы намыҫ менән үтәргә һүҙ бирҙеләр. Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға бирген вәғәҙәне үтәү — механизаторҙарҙың һәм колхозсыларҙың маҡтаулы бурысы ул.

Р. Кәримова,

(Махсус хәбәрсебеҙ).

Благовар.

„Совет работниктәре көнө"

Бүҙәк район Советы исполкомы 1951 йылдың март айынан башлап, планлы рәүештә, ай һайын «совет работниктәре көнөн» үткәрә башланы.

«Совет работниктәре көнө» беренсе тапҡыр 1951 йылдың 20 мартында район үҙәгендә үткәрелеп, бында беренсе мәсьәлә буйынса «Государство тураһында марксистик-ленинсе учение» тигән темаға район Советы исполкомы председателе урынбаҫары иптәш Ревякин лекция уҡыны. Икенсе мәсьәлә буйынса — «Совет аппараты эшенең формалары һәм методтары тураһында» тигән темаға район Советы исполкомы председателе урынбаҫары иптәш Шакуров доклад менән сығып яһаны.

Икенсе тапҡыр «совет работниктәре көнө» 1951 йылдың 3 апрелендә үткәрелеп, беренсе мәсьәлә буйынса «Советтәр — СССР-ҙың политик нигеҙе» тигән темаға исполкомдың культура-ағартыу эштәре бүлеге мөдире, район Советының депутаты иптәш Яҡшыбаев доклад менән сығып яһаны. Икенсе мәсьәлә буйынса— Халыҡ-ара хәл тураһында — район Советы депутаты иптәш Хәжеев доклад яһаны.

«Совет работниктәре көндәрен» үткәреүҙә исполком бүлектәренең, район государство учреждениеларының һәм урындағы Советтарҙың эштәрен яҡшыртыу, совет работниктәрен совет закондары менән таныштырыу һәм уларҙың белем кимәлдәрен, эш квалификацияларын күтәреү, уларҙы практик эшкә өйрәтеү һәм совет төҙөлөшө мәсьәләләрен үҙләштереү маҡсаты ҡуйыла. Шулай итеп был көн бер үк ваҡытта работниктәр өсөн уҡыу булып тора.

«Совет работниктәре көнөндә» район Советы исполкомының, уның бүлектәренең һәм район государство учреждениеларының (Госбанк, һаҡлыҡ кассаһы, социаль-тәьминәт бүлеге, райуполминзаг, маслопром һәм башҡалар) бөтә работниктәре, район Советы депутаттары, даими комиссияларҙың члендәре, шулай уҡ Бүҙәк ауыл Советы исполкомы члендәре — бөтәһе 150 кеше ҡатнаша.

Был көндө үткәреү район Советының дөйөм календарь планына индерелгән. Район Советы исполкомының совет көндәрен үткәреү өсөн март, апрель, май һәм июнь айҙарына бирелгән махсус тематик планы бар. Планда «совет работниктәре көндәрен» үткәреү даталары, лекцияларҙың, докладтарҙың темалары күрһәтелгән һәм докладсылар билдәләнгән. Шулай итеп ул план буйынса тейешле әҙерлек менән үткәрелә. Докладсылар һәм сығыш яһаусылар алдан әҙерләнеп киләләр. Был көндө ҡасан үткәреү һәм унда ниндәй мәсьәләләр ҡуйыласағы тураһында бүлектәрҙе, учреждениеларҙың работниктәренә алдан хәбәр ителә.

«Совет работниктәре көнөндә» алдан раҫланған план буйынса һәр ваҡыт ике мәсьәлә: беренсе мәсьәлә итеп теоретик темаға лекция йәки доклад, ә икенсе мәсьәлә итеп совет эшен практик ойоштороу — совет аппаратында эште нисек ойоштороу, бүлектәрҙең практик эштәре тураһында йәки бүлектәрҙә һәм учреждениеларҙа айырым эштәрҙең практик ҡуйылышы тураһындағы мәсьәләләр ҡуйыла.

Доклад һәм лекциялар һуңында киң фекер алышыуҙар була. Артабан тәжрибә алышыу маҡсатында бүлек мөдирҙәренең һәм бүлек работниктәренең сығыштары тыңлана. Шулай уҡ агробиология, агрономия фәндәре темаларына лекция һәм докладтар планлаштырыла.

«Совет работниктәре көнө» план буйынса район үҙәгендә айға бер тапҡыр үткәрелеп килә. Киләсәктә ул ауыл Советтарында ла ойошторолачаҡ. Билдәле, был көндө үткәреү яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Район Советы исполкомы уны үткәреү менән бер рәттән, урындағы Советтарҙың, исполком бүлектәренең, ойошмаларҙың эштәрен яҡшыртыу өсөн күп кенә башҡа төрлө саралар ҙа үткәрә. Ул ауыл Советтәренең ойоштороу-массовый эштәрен, уларҙың ойоштороусанлыҡ һәм етәкселек ролдәрен күтәреүгә һәм артабан яҡшыртыуға өлгәшә.

Бынан тыш исполкомдың ойоштороу-массовый саралар үткәреү планы буйынса районда ай һайын ауыл хужалығы специалистәре көнө, уҡытыусылар көнө, йәштәр көнө, колхозсыларҙың агротехника уҡыу көндәрен үткәреү практикаға индерелгән.

Х. Камалов,

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советенең ойоштороу-инструкторлыҡ бүлегенең өлкән инструкторы.

Өфө ҡалаһының «Динамо» стадионында волейбол буйынса республика беренселегенә есен ярыштар бара.
Һүрәттә: Өфө волейбол командаларының ярыш ваҡыты.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

„Кыҙыл Башҡортостан“ газетаһы призына эстафета

Физкультура һәм спорт беҙҙең илебеҙҙә миллиондарҙың яратҡан эше һәм уны үҫтереүгә бик ныҡ иғтибар ителә.

Һыуҙа йөҙөү — спорттың бик яҡшы һәм күңелле бер төрө. Досфлот ойошмаларында һәм ирекле спорт обществоларында һыу спорты буйынса өйрәнеү секция эшенең торошон тикшереү, уларҙа һыу спортын алға ебәреү буйынса эште артабан көсәйтеү, Досфлот члендәре һәм спортсмендар араһында яҡшы йөҙөүселәрҙе һәм шлюпка командаларын табыу һәм әҙерләү маҡсатында «Кыҙыл Башҡортостан» газетаһы призына традицион эстафета үткәрергә ҡарар ителде.

Был традицион эстафета Өфө ҡалаһының Досфлот Хәрби-Диңгеҙ флоты клубы районында Ағиҙел йылғаһында Хәрби-Диңгеҙ флоты көнө алдынан һәр йылдың йәкшәмбе көндәрендә буласаҡ. Ул быйыл 22 июлдә үткәрелә.

СССР Хәрби-Диңгеҙ Флоты көнөнә арналған «Кыҙыл Башҡортостан» газетаһы призына ойошторолған был эстафета Өфө һәм Черниковск ҡалаларының Досфлоттың район ойошмаларының һәм ирекле спорт обществоларының йыйылма командалары араһында беренселек есен үткәрелә. Һәм ул биш этаптан тора:

I — этап — һыу ағышына табан йөҙөү (ирекле стилдә). Ирҙәр 300 метрға тиклем йөҙәләр. Командалан бер кеше ҡатнаша.

II — этап — ҡатын-ҡыҙҙар өсөн «фофоц» тибында һыу ағышына табан 1500 метрға йөҙөү. Командалан 3 кеше.

III — этап — һыу ағышына табан 100 метрға кейем менән йөҙөү (тренировка костюмында һәм тапочкала).

IV — этап — 4 ишкәкле кәмә менән һыу ағышына ҡаршы 2000 метрға йөҙөү. Ирҙәр командаһынан 5 кеше.

V — этап — финишҡа табан һыу ағышына ирекле йөҙөү. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан бер кеше, 100 метр йыраҡлыҡҡа йөҙөргә тейеш.

Был эстафетаға Досфлотта член булып торған, врачтан рөхсәт алған, 18 йәшө тулған ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнаша алалар. Эстафетаға Өфө ҡалаһының һәр бер районынан 11 кешенән торған (ирҙәрҙән 7, ҡатын-ҡыҙҙарҙан 4 кеше, бер йыйылма) команда һәм командаға стэкселек итеүсе бер кеше менән бөтәһе 13 кеше ҡатнашырға тейеш. Ҡатнашырға теләүсе командаларҙың һаны сикләнмәгән. Зачет иң яҡшы һөҙөмтәләр биргән 2 команда буйынса үткәрелә. Беренсе урынды алыу команда тарафынан күрһәтелгән ваҡытҡа ҡарап иҫәпләнә. Эстафетала беренселекте алған команда «Кыҙыл Башҡортостан» газетаһының призы һәм республика Досфлот комитетенең грамотаһы менән наградлана. Еңгән командала ҡатнашҡан кешеләр шулай уҡ республика Досфлот комитете грамотаһы менән наградланалар. Эстафетала икенсе—өсөнсө урынды алыусы командалар ҙа ошондай уҡ грамоталар менән наградланасаҡтар.

Был традицион эстафетаға ҡатнашыу өсөн заявкалар Досфлоттың республика комитетена эстафета башланғанға тиклем 10 көн алда, ә быйыл 12 июлдән һуңға ҡалмай бирелергә тейеш. Иң һуңғы заявка эстафета үткәреү көнө алдынан, быйыл 21 июлдә түбәндәге формала бирелә: фамилияһы, исеме, атаһының исеме, тыуған йылы, милләте, партиялылығы, Досфлотта членлеге, ГТО значкисеме, ниндәй этап менән эстафетаға ҡатнаша һәм врачтың рөхсәте. Заявкаға Досфлоттың физкультура һәм спорт буйынса район комитете председателе ҡул ҡуя.

Спорт эше кин йәйелдерелә

«Ҡарлыман» совхозы йәштәре быйылғы йәйге спорт сезонын ныҡлы әҙерлек менән ҡаршыланылар. Бында яҡшы итеп йыһазландырылған спорт майҙаны бар. Спортсмендар махсус кейем менән тәьмин ителгән.

Спорт майҙанында көн һайын волейбол, футбол һәм башҡа төр спорт уйындары ойоштоpола. Совхоздың «Урожай» футбол командаһы яҡшы ғына уңыштарға өлгәшеп килә.

Күптән түгел был команданың Өфө ҡалаһының «Урожай» футбол командаһы менән иптәштәрсә осрашыуы булды. Осрашыу 5:3 иҫәбе менән совхоз «Урожай» командаһы файҙаһына тамамланды.

Н. Фәтҡуллина.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 11 июнь. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 11 июндә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының СССР вәкиле А. Громыко председателлегендә 67-се ултырышы булды.

Был ултырышта Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне хатта килешелмәгән пункт сифатында ла көн тәртибенә индереүгә үҙҙәренең бөтөнләйгә нигеҙһеҙ ҡаршы килеүҙәренән баш тартырға АҠШ, Великобритания һәм Франция делегацияларының ныҡышмалы теләмәүҙәре һөҙөмтәһендә кәңәшмә эшендә ниндәй ҙә булһа алға китеүгә килтермәне. Көнбайыш державаларҙың вәкилдәрендә, әлбиттә, бындай позицияны аҡлау өсөн ниндәй ҙә булһа нигеҙле дәлилдәр элекке көүек үк юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел.

11 июндәге ултырышта ла үҙҙәренең элекке тактикаларын ҡулланып, көнбайыш державалар вәкилдәре ике йөҙләләнеп, министрҙәр Советын саҡырыуҙы теләүҙәре тураһында белдерҙеләр, ләкин бер үк ваҡытта министрҙәр Советының көн тәртибе буйынса килешеүҙе өҙәүгә йүнәлтелгән үҙ позицияларын яҡланылар.

* * *

ПАРИЖ, 12 июнь. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 12 июндә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары 68-се ултырышҡа йыйналдылар. АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Көнбайыш державалар вәкилдәре кәңәшмәне һуҙыуға иҫәпләнгән үҙҙәренең обструкцион тактикаһын дауам иттерҙеләр. Великобритания вәкиле Дэвис 12 июндә беренсе булып һүҙ алды, ләкин ул тик бынан алдағы ултырыштарҙа үҙе һәм уның американ һәм француз коллегалары әйткән нәмәләрҙе ҡабатлап ҡына сыҡты.

* * *

ПАРИЖ, 13 июнь. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 13 июндә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары 69-сы ултырыштарына йыйналдылар. Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

СССР вәкиле А. Громыко 12 июндәге ултырышта Атлантик пакт, йәнәһе, «оборона» характерында, «тыныс» характерҙа һәм, шуға күрә, был пакт тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советының көн тәртибенә индерергә кәрәкмәй, тип иҫбатларға маташыусы көнбайыш державалар вәкилдәренең сығыштарын ышандырырлыҡ итеп тәнҡитләне. Громыко, көнбайыш державаларҙың был позицияһы Европалағы көсөргәнешлелеккә йомшартырға түгел, ә үҙҙәренең агрессив маҡсаттарында уны һаҡлап алып ҡалырға ынтылыуҙары менән аңлатыла, улар был маҡсаттарҙы государстволарҙың Төньяҡ-атлантик группировкаһы һәм Атлантик пакт менән бәйләйҙәр, тип күрһәтте. 12 июндәге ултырышта СССР вәкиле һуңғы булып сығыш яһаһа ла һәм 13 июндәге ултырышта көнбайыш державаларҙың вәкилдәре һөйләргә тейеш булһалар ҙа, өндәшмәй ҡалыуҙы яҡшыраҡ тип табып, уларҙың береһе лә һүҙ алырға теләмәне. Унан һуң председателлек итеүсе Пароди ултырышты япты.

Министрҙәр Советының көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеүгә ҡамасаулыҡ итеү өсөн көнбайыш державаларҙың вәкилдәре Ал дворецтағы кәңәшмәлә үҙҙәренең обструкцион тактикаһын үткәргән бер ваҡытта, көнбайыш державаларҙың хөкүмәттәре тарафынан төҙөлгән хәрби әҙерлек механизмы бөтә киңлеге менән хәрәкәт итә. «Се матен-ле пан» газетаһы Вашингтондан Американың оборона өсөн мобилизация управлениеһы етәксеһе Чарльз Вильсондың, «АҠШ Францияның һәм Англияның ҡабаттан ҡоралландырыуҙың үҙ программаларын мөмкин тиклем тиҙерәк һәм ныҡышмалыраҡ үтәүҙәрен теләр ине», тигән белдереүен тапшыра.

Күрәһең, Канада генеральный штабының начальнигы генерал Саймонстың Лондонға барыуы ла был айҡанлы килеп тыуғандыр, уның унда, шул уҡ газетаның хәбәр итеүенә ҡарағанда, «мөһим хәрби кәңәшмәләре буласаҡ. Яҡын көндәрҙә Саймонс Парижға киләсәк һәм генерал Эйзенхауэр менән осрашасаҡ».

«Монд» газетаһы 13 июндә Атлантик пактта ҡатнашыусы илдәрҙең сит ил эштәре министрҙәре һәм оборона министрҙәренең июль айында кәңәшмәһен саҡырыу күҙҙә тотола, улар ике мәсьәлә: Ҡушма Штаттар тарафынан официаль рәүештә тәҡдим ителгәненсә, Греция менән Төркиәне Төньяҡ атлантик блок составына индереү мөмкинлеге тураһындағы һәм Көнбайыш Германияның «Атлантик армия» тип аталған нәмәлә ҡатнашыуы тураһындағы мәсьәләне ҡараясаҡтар. Төркиә менән Грецияны Атлантик блокҡа индереү айҡанлы Париждең «Комба» газетаһының күптән түгел булған тапыуын хәтергә төшөрөп китеү урынлы булыр. Ул күптән түгел, «Атлантик пактты Урта диңгеҙ илдәренә уйланылған киңәйтеү был пактты һөжүм итеү инструментена һәм ошо юл менән, провокация элементена әүерелдерә», тип яҙҙы.

Газеталарҙан тик бер көн эсендә генә билдәле булған, СССР-ға һәм халыҡ демократияһы илдәренә ҡаршы йүнәлтелгән Атлантик пакттың агрессив характерен күрһәтеүсе факттар, дөрөҫөрәге фактарҙың бер өлөшө бына ошондай. Был пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советы сессияһында ҡарауға көнбайыш державалар хөкүмәттәренең ҡаршы килеүе юҡҡа ғына түгел. Улар был мәсьәләне тикшереүҙән ҡурҡалар, сөнки ул Атлантик пактҡа нигеҙләнгән уларҙың политикаһының агрессив характерен тағы ла асығыраҡ күрһәтер ине.

Ләкин көнбайыш державаларҙың делегациялары үҙҙәре тарафынан башланған обструкцияны нисек кенә оҙаҡ дауам иттерһәләр ҙә, ниндәй генә маневрҙарҙы ҡулланһалар ҙа улар СССР менән көнбайыш державалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең насарайыуының һәм Европалағы обстановканың көсөргәнешләнеүенең төп сәбәбе булып торған Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне тикшереүгә юл ҡуймауға ынтылыуҙан торған үҙҙәренең ысын уйҙарын, үҙҙәренең агрессив маҡсаттарында был көсөргәнешлекте һаҡлап ҡалырға тырышыуҙы общественный фекерҙән йәшерә алмаҫтар.

Болгарияла В. И. Ленин әҫәрҙәренең йыйынтығын баҫып сығарыу

СОФИЯ, 14 июнь. (ТАСС). Болгария коммунистар партияһының издательствоһы В. И. Ленин әҫәрҙәре йыйынтығының 6-сы томын 23 мең данала болгар телендә баҫып сығарҙы.

СИТ ИЛДӘРҘӘ ГОРЬКИЙ КӨНДӘРЕ

Венгрия

БУДАПЕШТ, 14 июнь. (ТАСС). Венгрия общественносе совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, венгер халҡының иң һөйөклө яҙыусыларының береһе А. М. Горькийҙең үлеүенә 15 йыл тулыуҙы киң билдәләй. Уның әҫәрҙәре Венгрия өсөн ғәйәт ҙур тираждарҙа таратылалар. Тик бер «Әсә» романы ғына илде азат иткәндән һуң 80 мең данала 6 баҫмала сыҡты. Хәҙер романдың 7-се баҫмаһы әҙерләнә. «Уй мадьяр каньвкиадо» издательствоһы А. М. Горький әҫәрҙәренең йыйынтығын венгер телендә баҫып сығарырға әҙерләй.

Күптән түгел хеҙмәтсендәрҙең һорауы буйынса Венгрия башҡалаһының [...] китабы йорто һәм Горький исемен[...] библиотека урынлашҡан үҙәк урам[...]ның береһе М. Горький исемендәге [...]вар тип йөрөтөлә башланы.

Бөйөк яҙыусының үлеүенә 15 йыл [...]лыу айҡанлы Горький исемендәге би[...]тека һәм совет китабы йорто Горький[...] рус, венгер, француз, инглиз һәм [...] телдәрҙәге китаптарының һәм [...]фияларының күргәҙмәһен ойоштор[...].

Венгрия-Совет обществоһы башҡа [...]малар менән берлектә 17 июндән 23 [...]гә тиклем «Горький аҙнаһын» үт[...].

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 14 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 14 июндә, Корея Халыҡ армияһының частәре, Ҡытай добровольцтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, бөтә фронттарҙа ла дошмандың ярһыулы атакаларын уңышлы кире ҡағыуҙы дауам иттерәләр, тип хәбәр итте.

Үҙәк һәм көнсығыш фронттарҙа Халыҡ армияһының частәре ике көн эсендә дошмандың 6 меңдән артығыраҡ һалдатын һәм офицерын үлтерҙеләр, эре калибрҙағы 10-дан артығыраҡ орудие һәм 13 [...] юҡ ителде, 2.120-нән артығыраҡ [...]товка ҡулға төшөрөлдө.

Америка-Англия агрессорҙарының [...] ғәскәрҙәре һәм марионет лисынмансы ғәск[...]ҙәр, ғәйәт ҙур юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, һуғышҡа яңы резервтар ташлайҙар [...] төньяҡҡа табан алға барырға маташ[...]ҙарҙы дауам иттерәләр.

14 июндә дошман самолеттарын [...] итеүсе уҡсылар дошмандың 8 само[...] атып төшөрҙөләр.

Демократик йәштәрҙең Бөтә Донъя федерацияһы секретариатының Англияның сит ил эштәре министрына ҡырҡа яуабы

БУДАПЕШТ, 14 июнь. (ТАСС). Май аҙағында Англияның сит ил эштәре министры Герберт Моррисон, парламент члендәренең һорауҙарына яуап биреп, демократик йәштәрҙең Бөтә Донъя федерацияһына (ВФДМ) һәм студенттәрҙең Халыҡ-ара союзына (МСС) тупаҫ һөжүм иткән, был ойошмаларҙы «бишенсе колонна» итеп квалификациялаған. Моррисон шул уҡ ваҡытта 1951 йылдың 5 августынан 19 августына тиклем Берлинда үткәреләсәк йәштәрҙең һәм студенттәрҙең тыныслыҡты яҡлауҙың Бөтә Донъя фестиваленә барырға Көнбайыш Германия йәштәренә ҡамасаулыҡ итеү өсөн көнбайыштағы өс державаның верховный комиссарҙарына үҙенең мөрәжәғәт итеүе тураһында белдергән.

Был айҡанлы ВФДМ секретариаты Моррисонға хат ебәргән, унда, айырым алғанда, былай тип әйтелә:

Дөрөҫләп, Моррисон әфәнде, шунан тора, ошондай төр ала ағыу белдереүҙәре һеҙгә «Йәштәр, тыныслыҡ өсөн, яңы һуғыш ҡурҡыныслына ҡаршы көрәштә берләшегеҙ!» тигән ябай һәм гүзәл лозунг аҫтында тыныслыҡты яҡлап, йәштәрҙең һәм студенттәрҙең өсөнсө Бөтә Донъя фестиваленә әҙерләнгән донъя йәштәренең изге инициативаһына һөжүм итергә мөмкинлек булһын өсөн кәрәк. Тап бына ошо лозунг аҫтында бөтә Германиянан 2 миллион немец йәштәре ҡатнашлығында 80-дән артығыраҡ илдән 25 мең егет һәм ҡыҙ йыйналасаҡ. Берлинда — фашизмдең элекке цитаделендә йәштәр тыныслыҡты яҡлау хаҡына берләшеүҙең бөйөк изге маҡсаты менән берберсе менән осрашасаҡтар. Һәм улар үҙҙәренең килешә алыуҙарына ышаналар...

Беҙ тыныслыҡ тантанаһына ышанабыҙ, беҙ фестивалдең һуғыш ҡурҡынысын нисек бөтөреү, халыҡ-ара ҡаршылыҡтарҙы хәл итеүҙә көс ҡулланыуҙы алып ташлау тураһында халыҡтарҙың килешә алыуҙарының кире ҡағылмаҫлыҡ иҫбатлауы булыуын теләйбеҙ. Һуғыш була ҡалһа беҙҙе, йәштәрҙе, һуғыш яландарына [...]ласаҡтар. Беҙ үҙ фестивалебеҙ[...] биш бөйөк державаның йыйнала ал[...] һәм Тыныслыҡ Пакты тураһында кил[...] алыуын иҫбатларға теләйбеҙ. Был Па[...]ты төҙөү тураһында кесле тылап халы[...] лендә тантаналы ант булып яңғырай.

Һеҙҙең илегеҙҙең йәштәре һәм башҡа[...] кешеләре килешеүҙең һәм халыҡтар [...]һында ирекле бәйләнештең изге идеал[...]тик тыныслыҡ дошмандарының [...] асыу менән мөнәсәбәт итә алыуҙарын [...]лайҙар. Улар һеҙҙә бөтә нәмә [...] итеп фашлаусы хәрәкәттәргә ҡайтып [...]рәс, һеҙҙең йомшаҡлығығыҙҙың ни [...] ҙур булыуын аңлайҙар, сөнки ала [...] һәм полиция саралары — башҡа [...]дәре булмаған кешеләрҙең яҙмышы [...] беҙ һәм һеҙҙең дуҫтарығыҙ тыныслыҡты яҡлаусыларҙың Бөтә Донъя конгресының делегаттарына һуңғы минутта Великобританияға инеүҙе тыйырға, уның [...]шына ҡамасаулыҡ итергә өлгәшкән [...]ҡытта һабаҡ алдығыҙ инде. Ләкин конгресс барыбер булды. Һөҙөмтәлә [...] уңыштарға өлгәшелде. Һеҙҙең хөкүмәтегеҙ бөтә кешелек алдында хурлыҡҡа ҡалды.

Фестивалдең уңышына ҡамасаулыҡ итергә уйлаһағыҙ һеҙ яңылышаһығыҙ. Бөтә донъя йәштәре быйыл йәй Берлинда осрашырға ҡарар иттеләр! Тыныслыҡ фестивален беҙ бөтә илдәрҙең намыслы кешеләренең яҡлауына бирәбеҙ. Беҙ [...] тыуған илдәренең бойондороҡһоҙлоғо [...]ҙерле булған, осыҡтан-осыҡ Вашингтон тарафынан ҡушылған хәрәкәттәр [...] һуҙҙар менән күңелһеҙ ғәжәпләнгән Англияның ябай кешеләренә мөрәжәғәт итәбеҙ...

Төрлө фекерҙәрҙәге һәм төрлө соц[...] хәлдәге йөҙәрләгән йәш инглиздар Берлинга фестивалгә киләсәк. Фестиваль, Моррисон әфәнде, тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ триумфы буласаҡ. Тыныслыҡ һуғышты еңер.

Редактор урынбаҫары: F. К. ЗӘЛКӘРНӘЙЕВ.

Бесән сабып йыйнауҙы ойоштороу

Бесән сабып йыйнау — ауыл хужалығында мөһим һәм яуаплы кампанияларҙың береһе. Уны үҙ ваҡытында һәм ҡыҫҡа срокта үткәреү юғары сифатлы бесән алыуҙың төп шарты булып тора.

Үләндәрҙең сәскә атыуына тиклемге осорҙа улар аҙыҡ матдәләренә һәм витаминға бай булалар. Шуға күрә бесән сабыуҙы ошо сроктарҙа үткәрергә кәрәк. Һуңлап сабылған бесән һаламдан айырылмай.

Башҡортостан малсылыҡ тәжрибә станцияһының һәм башҡа фәнни-тикшеренеү учреждениеләренең тикшереүҙәре, бесәнде һуңлап сапҡанда уның иң ҡиммәтле аҙыҡ өлөшө — аҡһымы 40 процентҡа тиклем һәм унан да күберәк юғалыуын билдәләйҙәр. Иртә сроктарҙа сабып алынған бесәндә аҡһым һәм витаминдар күп була. Бесән сабыуҙы һуҙлатыу унда аҙыҡ матдәләрен күп юғалтыуға һәм бесәндең насар булыуына алып бара. Шуға күрә бесән сабыуҙы үҙ ваҡытында башлауға һәм ҡыҫҡа срокта йыйнап алыуҙы ойоштороуға ныҡ иғтибар ителергә тейеш.

Болондарҙағы башаҡлы һәм ҡуҙаҡлы үләндәрҙең сәскә атыуҙан алдағы фазаһы бесән сабыуҙы башлау өсөн иң яҡшы срок булып иҫәпләнә. Үләндәрҙең төрләсә үҫеүҙәрен һәм төрләсә өлгөреүҙәрен иҫәпкә алып, бесәнде һайлама рәүештә сабыуҙы ойошторорға кәрәк. Бесән сабыуҙы үҙ ваҡытында үткәреү юғары сифатлы бесән етештереүҙе тәьмин итеү менән генә сикләнмәй, бәлки унда күпселек икенсе тапҡыр сабыуҙы ойошторорға мөмкинлек бирә. Болондарҙа икенсе тапҡыр сабылған бындай үләндәрҙе бесән, силос өсөн һәм йәшел кейенсә ашатыу өсөн файҙаланырға мөмкин. Икенсе тапҡыр сабыу — мал аҙығы ресурстарын арттыра торған мөһим сара ул. Башҡортостанда һыу баҫа торған болондар 160 мең гектар самаһы тәшкил итә. Әгәр ҙә ошо майҙандың өстән бер өлөшө генә лә икенсе тапҡыр сабыла торған булһа, ябай иҫәптәр буйынса ла, 400 мең центнер самаһы бесән етештерергә мөмкин. Был өҫтәмә рәүештә 40 мең һыйырҙы тәрбиәләүҙе тәьмин итәсәк.

Үлән сәселгән бөтә баҫыуҙарҙы һәм тигеҙ массивле болондарҙы бесән сапҡыс машиналар менән сабырға кәрәк. Машиналарҙың етештереүсәнлеген күтәреү өсөн һәр бер машинаға айырым загон бүленә. Ат йөрөтә торған бесән сапҡыстар өсөн бындай загондарҙың күләме бер көн эсендә сабыуға етерлек булырға тейеш. Машиналар тәрбиәләүҙе талап итәләр. Улар һәр төрлө бысраҡтан таҙартыла, ваҡытында майлана, салғылары үткерләнделә, салғының төбө һәм шатун быуыны һәм башҡалары үҙ ваҡытында майлана.

Ваҡ ағастар һәм түңгәктәр булған сабынлыҡтар ҡул салғылары менән сабылырға тейеш. Тигеҙ болондарҙа үләндәрҙе тәптән сабырға кәрәк. Улар ерҙән 4-5 сантиметр бейеклектә ҡырҡтырылалар. Бесән сапҡыстарҙың салғылары ошолай эшләү өсөн көйләнергә тейеш. Тигеҙ булмаған болондарҙа һәм былтыр сабылмай ҡалған ерҙәрҙә үләндәрҙе 5-6 сантиметр бейеклектән ҡырҡтырырға кәрәк. Бынан да юғары киммәлдә ҡырҡтырғанда бесән урожайының юғалтылыуына юл ҡуйыла.

Бесәнде сабыу һәм киптереп йыйнау эштәре ҡыҫҡа срокта үткәрелергә тейеш. Сабыу менән йыйнау араһында өҙөклеккә юл ҡуйырға ярамай. Сөнки уға юл ҡуйыу йыш ҡына бесәнде юғалтыуға алып бара. Сабылып та үҙ ваҡытында йыйнап алынмаған бесән ел һәм ямғыр аҫтында ҡалыуы мөмкин, был бесәндә аҙыҡ матдәләрен кәметә. Ямғыр аҫтында ҡалған бесәндә аҙыҡлылыҡтың кәмеүе 30 процентҡа етә.

Бесәндең сифаты күбеһенсә уны киптерә белеүгә ҡарай. Ямғырлы көндәрҙә бесәнде киптереүҙең иң яҡшы ысулы — бағаналарҙан эшләнгән махсус ҡулайламаларҙа киптереү. Ҡояшлы көндәрҙә, ялан райондарында сабылған бесәнде шул уҡ көндә киптерергә һәм икенсе көндә күбәләргә кәрәк.

Оҙаҡ ямғырлы көндәрҙә бесәнде яҡшылап киптереп булмай. Бындай саҡта уны тоҙлап консервировать итергә кәрәк. Бының өсөн үләндәр 20—25 сантиметр ҡалынлыҡта һалына һәм һәр бер ҡатламға тоҙ һибелә. Бында һәр бер тонна бесәнгә 3-4 килограмм тоҙ һибелә. Ҡайһы бер саҡтарҙа бындай үләндәрҙән күкһетелгән бесән әҙерләнә. Бының өсөн кипмәгән үләндәрҙе тигеҙ һәм тығыҙ итеп кәбәнгә һалына һәм өҫтөнән һалам ҡаплана. Бында бесән үҙлегенән үҙе ҡыҙа һәм кибә. Үләндәрҙе киптереү мөмкин булмаған көслө ямғырлы көндәрҙә бесәнде силосларға кәрәк.

Башҡортостан колхоздарында аҡһым һәм витаминле бесән күберәк әҙерләнергә тейеш. Бындай бесән колхоздарҙа бөтә мал аҙығының кәмендә 10 процентен тәшкил итһен. Быҙау, сусҡалар һәм күп һөт биреүсе һыйырҙар өсөн витаминле бесәндәр талап ителә. Бындай бесәнде сәсеп үҫтерелгән баҫыуҙарҙа һәм тәбиғи болондарҙа үләндәрҙең йәш сағында, сәскә атыуға тиклем сабып алыу менән әҙерләнә. Ҡоро көндәрҙә сабылған бесән икенсе көнөндә үк 1—1,5 центнер күләмендә күбәләнә. Үләндәр күбәләрҙә тамам кибә. Кибеп өлгөргән бындай бесән кисекмәҫтән һарайҙарға ташып ҡуйыла.

Сабылған үләндәрҙе әҫкертләү мөһим эш ул. Был эш тәжрибәле колхозсыларға тапшырыла. Кәбән йәки әҫкерт өсөн урындар алдан һайланырға тейеш.

Бесән сабып йыйнауҙа хеҙмәтте ойоштороу уңышты хәл итә. Шуға күрә был эшкә ҙур иғтибар итергә кәрәк. Был осорҙа колхоздарҙың мал аҙығы әҙерләү бригадаларына өҫтәмә рәүештә кешеләр бирелергә тейеш. Бындай бригадалар булмаған колхоздарҙа бесән сабып йыйнау эше баҫыусылыҡ бригадаларына тапшырыла. Колхоздарҙа бесән сабып йыйнау осорона эш планы төҙөлөргә һәм эшләп сығарыу нормалары билдәләнергә тейеш.

Һәр бер болонда кәбән һәм әҫкертҡа өйөлгән бесән колхоз правлениеләре тарафынан акт буйынса ҡабул ителә һәм колхоздың фураж кладовщигына һаҡлауға тапшырыла.

Бесән сабып әҙерләүҙе йәйелдереү менән бер үк ваҡытта, силос һалыуҙы ойошторорға кәрәк. Силос һалыу планының 90 проценте урожай йыйнауҙы башлауға тиклем үтәлергә тейеш.

Район ауыл хужалығы органдарының, колхоз етәкселәренең һәм бөтә колхозсыларҙың бурысы быйыл бесән сабып әҙерләү планын үтәүҙән һәм арттырып үтәүҙән тора. Бының өсөн бесән сабып йыйнау һәм силос һалыу үҙ ваҡытында яҡшы сифатлы итеп үткәрелергә тейеш. Был эштең уңышлы үткәрелеүе общественный малсылыҡты артабан үҫтереү һәм продуктивлегын күтәреү эштәренә залог буласаҡ.

Д. Коврижных,
ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — ССР Союзының Ҙур театр артистәре — РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы, Халыҡ-ара фестиваль лауреаты **Майя Плисецкая** һәм **Владимир Голубин** ҡатнашлығында «АҠҠОШ КҮЛЕ» балеты. Кис 8 сәғәт 30 минутта башлана.

Рус драма театрында — Луначарский исемендәге баҫсала — «АННА КАРЕНИНА».

Кис 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СПОРТ НАМЫҪЫ».

«Салауатта» — «КАЗАК ГАЛОТА Т[...]РАҺЫНДА УЙҘАР».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — көндөҙ «ЕТЕ ҠЫЙЫУ КЕШЕ», кис «[...]ТОВСКИЙ».

«Иҙелдә» — «ДАЛАЛА».

Өфө ҡалаһы малярияға ҡаршы станцияһының белдереүе

1951 йылдың 19 июненән алып 25 июненә тиклем республиканың малярияға ҡаршы станцияһы малярия серәкәйҙәренең ҡарышлауыҡтарын бөтөрөү маҡсатында һыу ятҡылыҡтарына самолеттан ағыу һибәсәк, тип белдерә. Ағыулау эштәре тиодифениламин һәм Париж йәшеле ҡулланыу юлы менән Өфөнән Черниковск ҡалаһына тиклем 5 километрлыҡ зонала һәм халыҡ йәшәгән пункттар: Октябрьская революция исемендәге затон, Михайловка, Сурешка, Черниковск химия заводының ҡала яны хужалығы, Алексеевка, Сосновка, Тарбеевка, Лавочное, Ст. Александровка, Максимовка, Шакша, Базиловка, Йылҡыбай, Дудкин переправаһы, Өфө ял йорто, Карповка, Чесноковка, [...]фабриканың ярҙамсы хужалығы, Өфө ҡалаһының Дим районы, Бустарево, Романовка, Миловканан алыҫ түгел урындарҙа үткәреләсәк.

Умарта аҫраған бөтә кешеләр умарталарын ағыулана торған һыу ятҡылыҡтарынан 7—10 километрға ситкә сығарырға тейештәр.

Мал аҫраусылар ағыулау үткәргәндән һуң 3 тәүлек буйына малдарын ағыуланған һыу ятҡылыҡтарына ебәрмәҫкә тейештәр.

Белешмәләр алыу өсөн түбәндәге адресҡа мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 74-се номерлы йорт. Телефон номеры — 2-92-91.

Өфө ҡалаһы 3-сө участка халыҡ судының судисполнителе Башкомбанкка ссудаларҙы түләмәгән өсөн Третьяков Павел Михайлович — Затон, Дон урамы, 30; Демин Петр Иванович—Линейная урамы, 85; Ғәбдрәфиҡов Камильян Хәтип улының йортона — Придорожная урамы, [...] торг иғлан итә.

Торг ошо йылдың 19 июнендә бул[...]. Белешмәләр менән судисполн[...] мөрәжәғәт итергә, телефон номе[...] 2—85—14.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49. Хеҙмәтсендәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П 02518 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

Ҡыҙыл Башҡортостан

№ 118(8835) 1951 йыл 17 ИЮНЬ йәкшәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

Иртәгә Алексей Максимович Горькийҙең үлеү көненә 15 йыл тула.

Капитализмде ауыһыҙ фаш итеүсе, тыныслыҡ өсөн көрәштә бөтә йөрәгенән яҡлаусы, империалистик һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы арымай-талмай көрәшеүсе бөйөк рус яҙыусыһы А. М. Горькийҙең иҫтәлеген бөтә совет халҡы ысын күңелдән кәҙерләп хөрмәтләй.

Һынлы искусствоның артабанғы уңыштарына

Большевиктар партияһы социализмдан аҡрынлап коммунизмға күсеү осоронда хеҙмәтсән халыҡты коммунистик рухта тәрбиәләү өлкәһендә әҙәбиәт һәм искусство работниктәре алдына ҙур бурыстар ҡуйҙы. Партия Үҙәк Комитетенең идеология мәсьәләләре буйынса ҡабул иткән ҡарарҙары был өлкәлә боевой программа булып тора.

Үҙҙәренең ижадтарын социалистик реализм принциптәренә нигеҙләп, искусствоның бик күп кенә работниктәре ВКП(б) Үҙәк Комитетенең ҡарарҙары ҡабул ителгәндән һуң үткән осорҙа күренекле уңыштарға өлгәштеләр. Илебеҙ уларҙы юғары баһаланы, иң яҡшы әҫәрҙәр Сталин премиялары биреү менән билдәләнде.

Совет тормошо темаһы, уның хеҙмәттә тиңдәшһеҙ батырлыҡтар күрһәтеүсе кешеләре, беҙҙең гигант төҙөлештәребеҙ искусство работниктәре эшендә үҙәк тема булып әүерелделәр. Беҙҙең художниктарыбыҙ, скульпторҙарыбыҙ беҙ йәшәгән данлы осорҙоң бәхетле тормошон, уның кешеләренең яҡты образын сағылдыралар, уларҙың ижадтары тарих биттәренә социализмдең бөйөклеген сағылдырыусы мәңгелек һәйкәл булып инәләр. Быны Башҡортостан һынлы искусство работниктәренең ижадтарында бик асыҡ күрергә мөмкин. Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа ҙур полотнолы яҡшы картиналар, скульптуралар барлыҡҡа килде. Художниктар, скульпторҙар партияның идеология мәсьәләләре буйынса ҡарарҙары менән ҡоралланып, тормошто тәрәнерәк һәм тулыраҡ итеп өйрәнә башланылар. Шуның өсөн уларҙың ижадтары халыҡҡа тиҙ аңлашылыусан булып сыҡты, улар [illegible]

[illegible]

Скульптор Т. Нечаева Социалистик Хеҙмәт Геройы Банат Батырова бюсе менән һәм художник В. Андреев «Туймазы» [illegible] картинаһы менән 1950 йылда РСФСР күләмендә үткәрелгән күргәҙмәлә ҡатнаштылар һәм бүләк алдылар.

Художник Арсланов «Мәзенә» операһын, «Аҡкош күле» һәм «Ҡыҙыл мак» балеттарын сәхнәләштереп оформить итеүҙә үҙенең ҙур оҫталығын күрһәтте.

[illegible]

художниктар араһында әле осрағанса «әҫәрҙе аңлап еткермәүҙән» ҡотолоу өсөн тормошто тәрән өйрәнеү, халыҡ араһында йыш булыу, улар менән аралашыу, типик күренештәрҙе һайлап ала белеү әһәмиәтле. Теге йәки был картинаның һәм скульптураның үлемһеҙлеге — уның халыҡсан булыуында.

Республикабыҙҙың һынлы искусство работниктәре социалистик реализм методына ысын мәғәнәһе менән тик һуңғы ваҡытта ғына эйә була башланылар. Республика художниктәренән һәм скульпторҙарынан 1950 йылға тиклем, тотош ес йыл буйына Федерация һәм Союз күргәҙмәһенә бер кемдең дә үҙ ижады менән ҡатнаша алмауы быйын асыҡ факты булып тора. Шулай уҡ ун автономиялы республика һынлы искусство работниктәренең уҙған йылда Ҡазанда үткәрелгән күргәҙмәһендә художник А. Тулькиндең эшендә формализм күренештәренең урын алыуы билдәләп үтелде.

Пәнле совет тормошо менән бергә булыу, совет ысын барлығын өйрәнеү — ижади уңышлылыҡҡа алып бара. Андреев һәм Нечаева иптәштәрҙең яҡшы картина һәм скульптура ижад итеүҙәре уларҙың үҙ геройҙарын урындарға барып ныҡлап өйрәнеүҙәренә бәйләнгән. Хәҙер Башҡортостан художниктәренең бөтә коллективе лә районларға, промышленность үҙәктәренә барыу, темалар буйынса урында эшләү ҡыҙыҡһыныра башланы. Сөнки яҡшы ижад бынан башҡа булыуы мөмкин түгел. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре Управлениеһе республиканың һынлы искусство работ- [illegible]

[illegible]

Натурализмдан, формализмдан, айырым [illegible]

Мәскәүҙә Украина искусствоһы һәм әҙәбиәте декадаһының асылыуы

15 июндә Мәскәүҙә Украина искусствоһы һәм әҙәбиәте декадаһы асылды. [illegible]

[illegible]

УССР совет яҙыусылары Союзы правлениеһенең председателе А. Е. Корнейчук Украина совет әҙәбиәте турһында [illegible]

[illegible] (ТАСС).

Башҡорт АССР-ы Ҡандра районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең

ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Беҙ, дөйөм йыйылыштарыбыҙҙа үҙ мөмкинлектәребеҙҙе тикшереп, 1951 йылда ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарының яңы күтәрелеше өсөн бөтә халыҡ социалистик ярышына ҡушылабыҙ һәм үҙебеҙгә түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ:

Арыш сәсеүлектәренең бөтә майҙандарының һәр гектарынан 92-шәр бот, ә 1900 гектар майҙандың һәр гектарынан 117-шәр бот, бойҙайҙан уртаса һәр гектарҙан 90-шар бот, ә 2600 гектар майҙандың һәр гектарынан 117-шәр бот, һолонан — 100-әр бот, тарыһан—75-әр бот, ә 375 гектар тарының һәр гектарынан 93-әр бот, ҡара бойҙайҙан — 68-әр бот, борсаҡтың бөтә майҙанының һәр гектарынан уртаса 89-ар бот, кәнбағыштан — 53-әр бот урожай, тарманың һәр гектарынан — 33-әр бот сүс һәм 30-ар бот орлоҡ, горчица һәм шепкәндең һәр гектарынан 24-әр бот, картофтан — 900-әр бот, күп йыллыҡ үләндәрҙең һәр гектарынан 7-шәр бот орлоҡ урожайы алырға.

Общественный малсылыҡты һәм ҡошсолоҡто үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын һәр бер колхозда үтәргә һәм 1951 йылдың аҙағына планға ҡарата йылҡыларҙың 102 процентҡа, мөгеҙле эре малдарҙың 101 процентҡа, һарыҡ һәм кәҙәләрҙең 103 процентҡа, сусҡаларҙын 103 процентҡа һәм ҡоштарҙың 100 процентҡа үҫеш тәшкил итеүенә өлгәшергә. Һәр бер һыйырҙан уртаса 1650-шәр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан 3,1 килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы һәм һәр бер тауыҡтан 60-ар йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

Государство алдындағы бөрөнсе бурысты срогынан алда үтәргә, иген тапшырыу планын 1951 йылдың 1 октябренә тамамларға.

Йөкләмә Ҡандра районы колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәренең дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Башҡорт АССР-ы Сәҡмағош районы колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең

ЙӨКЛӘМӘҺЕ

Беҙ, Сәҡмағош районы колхозсылары һәм колхозсы ҡатын ҡыҙҙары, МТС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре 1951 йылда түбәндәге күрһәткестәргә өлгәшеү өсөн йөкләмә алабыҙ:

Арыш сәсеүлектәренең бөтә майҙанының һәр гектарынан 105-әр бот, ә 3500 гектарҙың һәр гектарынан 120-шәр бот, бойҙайҙан — 90-шар бот, ә 4365 гектар бойҙайҙын һәр гектарынан 102-шәр бот, һолонан 110-ар бот, ә 3100 гектар майҙандың һәр гектарынан 132-шәр бот, борсаҡтың һәр гектарынан уртаса 85-әр бот, тарынан — 70-әр бот, ә 350 гектар тарының һәр гектарынан 84-әр бот, ҡара бойҙайҙан — 70-әр бот, ә 600 гектарҙың һәр гектарынан 84-әр бот, кәнбағыштан — 50-шәр бот урожай, тарманың һәр гектарынан 33-әр бот сүс һәм 30-ар бот орлоҡ, картофтан 850-шәр бот, ә 150 гектар картофтың һәр гектарынан 900-әр бот урожай алырға.

Продукт биреүсе общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын срогынан алда үтәүгә өлгәшергә — мөгеҙле эре малдар, сусҡалар, һарыҡтар һәм кәҙәләр үрсетеү буйынса пландь 1951 йылдың 1 октябренә, ә ҡоштар буйынса 1 ноябргә үтәргә.

Фуражлағы һәр бер һыйырҙан уртаса 1700-әр литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан кәмендә 2,7-шәр килограмм йөн ҡырҡып алыуҙы һәм һәр бер тауыҡтан кәмендә 75-әр йомортҡа алыуҙы тәьмин итергә.

Государствоға иген тапшырыу планын, малсылыҡ продукттарынан ит, һөт һәм йомортҡа тапшырыу йөкләмәһен 1951 йылдың 1 октябренә, ә йөн тапшырыу йөкләмәһен 15 сентябргә үтәргә.

Йөкләмә Сәҡмағош районы колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәренең дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Урожай йыйнау машиналары әҙер

Мул урожайҙы ҡыҫҡа срокта, юғалтыуһыҙ йыйнап алыу өсөн үҙға ныҡлап әҙерләнергә кәрәк. Быны иҫкә алып, беҙ бесән һәм урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙы планлы ойошторҙоҡ һәм күршеләге «Красная дружина» колхозының тимерселәре менән социалистик ярышҡа сыҡтыҡ.

Ошо көндәрҙә ике колхоздың тимерселәре араһында ярыш договорының үтәлеше тикшерелде. Комиссия беҙҙең эштәребеҙҙе яҡшы тип билдәләне.

Беҙҙең Фрунзе исемендәге колхозда 15 бесән сапҡыс, 13 ат тырмаһы, 6 лобогрейка, 4 клейтон, 3 триер, 3 молотилка ремонтланды. Хәҙер беҙ арбалар, фургондар ремонтлауҙы тамамлайбыҙ.

Беҙ социалистик йөкләмәне үтәү өсөн көрәштә намыҫ менән эшләйбеҙ. Тимерселәрҙән Ғәйса Ишморатов һәм Моҙат Игишев иптәштәр көн һайын 2—2,5 норма үтәйҙәр.

Ныҡышмалы эш һөҙөмтәһендә беҙҙең колхоз урожай йыйнауға әҙерлекте тулыһы менән тамамланы.

Дауыт Байғотлин.

Баймаҡ районы Фрунзе исемендәге колхоздың өлкән тимерсеһе.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында

Комбайнер кадрҙары әҙерләү тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы МТС-тарҙың һәм совхоздарҙың 1951 йылдың урожайын йыйнауға механизатор кадрҙары менән тәьмин ителеүенең торошон тикшерҙе һәм Ауыл хужалығы министерствоһы, совхоздар тресттары, байтаҡ райондарҙағы совет һәм ауыл хужалығы органдары механизатор кадрҙары әҙерләү һәм 1951 йылдың урожайын йыйнауҙы башлауға тиклем ундай кадрҙар менән машина-трактор станцияларын һәм совхоздарҙы тәьмин итеү мәсьәләләренә етерлек иғтибар бирмәйҙәр, тип билдәләне.

Һөҙөмтәлә байтаҡ райондарҙың һәм бигерәк тә Тәтешле, Покровка, Шаран, Нуриман, Балтач, Бишбүләк, Матрай, Көйөргәҙе, Стәрлетамаҡ, Кушнаренко, Ҡыйғы, Оло Теләк, Воскресен һәм Илеш райондарының бик күп машина-трактор станциялары һәм совхоздары квалификациялы комбайнерҙар һәм уларҙың ярҙамсылары менән, шулай уҡ тракторҙарҙы ике сменала эшләтеү өсөн трактористар менән тулыһынса тәьмин ителмәгәндәр.

Шул уҡ ваҡытта механизация мәктәптәрендә һәм курстарҙа ундай кадрҙарҙы әҙерләү пландары үтәлмәйҙәр.

Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министерствоһы, совхоздар тресттары, ҡайһы бер район Советтәре исполкомдары һәм урындарҙағы ауыл хужалығы органдары комбайнерҙар, уларҙың ярҙамсылары, трактористәр, шоферҙар һәм урожай йыйнау машиналары машинистәрен уҡытыуҙарҙың сифатын күтәреү тураһында тейешле хәстәрлек күрмәйҙәр.

МТС-тарҙы һәм совхоздарҙы 1951 йылдың урожайын йыйнауға квалификациялы механизатор кадрҙары менән тәьмин итеү маҡсатында Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министерствоһын, бөртөклө ашлыҡ һәм малсылыҡ совхоздары тресттарын, район Советы исполкомдарын, МТС-тар һәм совхоздар директорҙарын түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итте:

Ун көнлөк срок эсендә һәр бер МТС-тың һәм совхоздың механизатор кадрҙары менән тәьмин ителеүен тикшерергә һәм комбайнерҙар һәм уларҙың ярҙамсылары, трактористәр, молотилка, етен йыйғыс, сөгөлдөр ҡаҙғыс һәм иген таҙартҡыс ҡатмарлы машиналар машинистарынең талап ителгән һандары менән МТС-тарҙы һәм совхоздарҙы комплектовать итеү өсөн өҫтәмә саралар күрергә;

быйғаса әҙерлек үткән комбайнерҙарҙы, трактористарҙы һәм башҡа механизатор кадрҙарын специальностәре буйынса МТС-тарҙа һәм совхоздарҙа эштә файҙаланыуҙы тәьмин итергә һәм квалификацияны күтәреү, машиналарҙы файҙаланыуҙы ойоштороуҙа алдынғы методтарҙы өйрәнеү буйынса улар менән семинарҙар үткәрергә;

1951 йылдың урожайын йыйнауҙы башлауға тиклем комбайнер ярҙамсылары, ҡатмарлы молотилкалар һәм етен йолҡоу машиналары машинистәре әҙерләү буйынса курстар үткәрергә;

1951 йылдың урожайын йыйнауҙа комбайндарҙы юғары етештереүсәнлекле һәм өҙлөкһеҙ файҙаланыуҙы тәьмин итеү өсөн комбайн агрегаттары работниктәренең даими составын — комбайнерҙарҙы, уларҙың ярҙамсыларын һәм трактористарҙы һайлап алыуҙы тәьмин итергә, урожай йыйнауҙа комбайндарҙы юғары етештереүсәнлекле һәм өҙлөкһеҙ файҙаланыуҙы тәьмин итеү өсөн шулай уҡ комбайн агрегаттарына колхозсыларҙың һәм совхоз эшселәренең даими составтарын бөтә урожай йыйнау осорона беркетергә.

Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министерствоһына, район Советтәре исполкомдарына, МТС директорҙарына түбәндәгеләр тәҡдим ителде: урожай йыйнау башлауға тиклем механизация мәктәптәрендә һәм курстарҙа өҫтәмә рәүештә производствонан айырып уҡытыу юлы менән тағылмалы комбайндар өсөн, башлыса, тәжрибәле комбайнерҙар ярҙамсылары иҫәбенән 865 комбайнер, үҙе йөрөй торған комбайндарҙы йөрөтөү өсөн, башлыса, тәжрибәле трактористар һәм шоферҙар иҫәбенән 386 механик-комбайнер, иң яҡшы колхозсылар иҫәбенән 1262 комбайнер ярҙамсыһы, тәгәрмәсле тракторҙарҙың трактористәре иҫәбенән гусеницалы тракторҙарҙы йөрөтөү өсөн 405 тракторист һәм производствонан айырмай уҡытыу юлы менән тәгәрмәсле тракторҙарҙы йөрөтөү өсөн 3000 тракторист әҙерләргә.

Шулай уҡ Башҡортостан һөтсөлөк-сусҡасылыҡ совхоздары тресына ла, производствонан айырмай уҡытыу юлы менән урожай йыйнауҙы башлауға тиклем өҫтәмә рәүештә, башлыса, тәжрибәле комбайнерҙар ярҙамсылары иҫәбенән 94 комбайнер һәм 201 тракторист, шулай уҡ совхоздар эргәһендәге курстарҙа һәм механизация мәктәптәрендә производствонан айырып уҡытыу юлы менән 113 тракторист әҙерләргә тәҡдим ителде.

БАССР Министрҙар Советы Ауыл хужалығы министерствоһына, шулай уҡ район Советы исполкомдарына курстарҙың һәм механизация мәктәптәренең эштәрен тикшерергә һәм механизатор кадрҙары әҙерләүҙе ойоштороуҙа һәм уҡыусылар өсөн нормаль тормош шарттары тыуҙырыуҙа уларға ярҙам күрһәтергә мәжбүр итте.

Шәкәр сөгөлдөрө сәсеүлектәре яҡшы тәрбиәләнә

Ауырғазы районы Салауат исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре быйыл 120 гектар шәкәр сөгөлдөрө сәскәйнеләр. Хәҙер улар сәсеүлектәрҙең рәт араларын беренсе тапҡыр утап, йомшарталар. Был эштә бригадалар, звенолар һәм айырым колхозсылар үҙ-ара ярышып эшләйҙәр. Колхоздың икенсе басыусылыҡ бригадаһының иптәш Сафиуллина етәкселек иткән звеноһы үҙенә беркетелгән майҙанда тәүге эште тамамланы ла инде.

Ф. Богданов.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА

Болан үҫтереүселәрҙе культуралы хеҙмәтләндереү

СЫКТЫВКАР, 15 июнь. (ТАСС). Совет государствоһы Төньяҡ Себер болан үҫтереүселәре тураһында ҙур хәстәрлек күрә. Коми АССР-ының болан үҫтереүселәрен культуралы хеҙмәтләндереүгә генә быйыл 900 мең һумға яҡын аҡса бүленде. Быйыл Карек диңгеҙенең яр буйҙарында күсеп йөрөүсе колхоз болан үҫтереүселәре менән айына ике тапҡыр регуляр авиация бәйләнеше урынлаштырыла.

Ошо көндәрҙә летчик-миллионер В. Зайцев самолеты Сыктывкарға ҡайтты. Ул Ҙур ер тундраһы районында болан үҫтереүселәргә почта, газеталар, журналдар, художестволы әҙәбиәт, зооветпункттар өсөн медикаменттар, батареялы радиоприемниктар өсөн питание ташлаған.

Джангян ауылының иң ҡарт кешеһе

БАКУ. (ТАСС). Сальян районы Джангян ауылында 114 йәш тулған колхозсы Салыг-Баба Гасанов йәшәй. Ҡарт булыуына ҡарамаҫтан, ул үҙен шат һиҙә әле. Гасановтың 12 улы һәм ҡыҙы, 21 ейәне, ете бүләһе бар.

Уларҙың бөтәһе лә колхозда эшләйҙәр.

Ҡырғыҙстанда урожай йыйнау башланды

ИСФАНА (Ош өлкәһе). (ТАСС). Ляйляк районының колхозсылары Ҡырғыҙстанда беренсе булып бөртөклө ашлыҡтары йыйнай башланылар. Горький, Киров, Молотов исемендәге ауыл хужалығы артелдәрендә көҙгө арпа йыйылды.

18 июндә совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы бөйөк рус яҙыусыһы Алексей Максимович Горькийҙең үлеүенә 15 йыл тула.

Был көндәрҙә А. М. Горькийҙең музейенә килеүселәр һаны байтаҡ артты.

Һүрәттә: музей залдарының береһендә. **Н. Киреев һәм З. Евзерихин фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).**

Яңы төҙөлөш материалдары

Нефть промышленносе министерствоһының төҙөлөш буйынса үҙәк ғилми-тикшеренеү институты яңы тип төҙөлөш материалдарын булдырыу өҫтөндә эшләй. Улар араһында һеңдермә әбиздән эшләнгән стена блоктары һәм биҙәү материалдары күренекле урын алып торалар. Уларҙы теләһә ниндәй әбиз заводында етештереп була. Сырьё булып ҡом һәм шлак менән ҡушылған әбиз-кипелька һәм әбиз яһауҙа хәҙерге көнгә тиклем ҡулланылмаған углекислый газ хеҙмәт итә.

Был яңы материалдарҙы етештереү министерствоның Башҡортостандағы заводында ойошторолған. Улар төҙөлештәрҙә ҡулланыласаҡтар.

(ТАСС).

Колхозсылар юғары белем алалар

Юғары агрономик йәки зоотехник белем алырға теләүсе алдынғы колхозсылар, бригадирҙар, ауыл хужалығы артелдәре председателдәренең, совхоз һәм МТС работниктәренең һаны йылдан-йыл арта бара.

Уларҙың күбеһе Бөтә Союз ситтән тороп уҡыта торған ауыл хужалығы институтында уҡыйҙар. Бында тыш уында агрономдар һәм зоотехниктар үҙ квалификацияларын күтәрәләр. Институтта һәм урындарҙағы уның 65 бүлегендә 16.300 студент уҡый. Кыҙ көнө беренсе курсҡа тағы 925 кеше алынасаҡ. Төп факультеттарҙан тыш институтта урман-мелиорация, бәләкәй һәм урта электр станцияларҙы төҙөү, ер төҙөү бүлектәре бар.

13 июнда институтта беренсе зоотехниктар уҡып сыҡты.

(ТАСС).

Нефть сығарыуҙың ярты йыллыҡ планы срогынан алда үтәлде

САРАТОВ, 15 июнь. (ТАСС). «Саратовнефть» берекмәһе предприятиеларенең коллективтары нефть һәм газ сығарыуҙың ярты йыллыҡ планын срогынан алда үтәнеләр.

Нефть, үткән йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда, байтаҡ артыҡ сығарылды. Бер тонна ағыулыҡтың үҙенә төшөү хаҡы планға ҡарағанда 7,2 процентҡа арзанайтылды.

А. М. Горький — пролетариат әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы

Тыныслыҡ һәм социализм өсөн бөйөк көрәшсе

Бынан 15 йыл элек, 1936 йылдың 18 июнендә бөйөк рус яҙыусыһы, совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, коммунизмдең еңеүе өсөн арыу-талыуҙы белмәй көрәшеүсе Алексей Максимович Горькийҙең йөрәге тибеүҙән туҡтаны.

Рус культураһының корифейе А. М. Горький хеҙмәтсәндәрҙең бөйөк юлбашсылары В. И. Ленин һәм И. В. Сталин менән оҙаҡ йылдар буйына килгән шәхси дуҫлыҡ аша бәйләнгәйне. Уларҙың тура-нан-тура һәм тәрән йоғонтолары аҫтында А. М. Горький үҙенең гүзәл әҫәрҙәрендә социалистик революцияның еңеүе менән билдәләнгән тарихи эпоханы сағылдырҙы.

Горькийҙең ижади юлы большевиктәр партияһының тороп көрәше менән органик рәүештә бәйләнгән.

«Горькийҙең художестволы теленең беҙҙең революциябыҙ яҙмышына йоғонтоһо нисек ҙә булһа беҙҙең башҡа яҙыусыбыҙҙың йоғонтоһона ҡарағанда турыраҡ һәм киңерәк ине. Тап быны шуның өсөн Горький беҙҙең илебеҙҙә һәм бөтә донъя хеҙмәтсәндәре күҙе алдында пролетар, социалистик әҙәбиәткә ысын нигеҙ һалыусы булып тора ла». (В. М. Молотов).

Горький эшселәр синыфы вәкилдәрен беренсе булып киң һәм тулы рәүештә күрһәтте. Революционерҙар образдары — Нила («Мещандар» пьесаһы), Павел Власов («Әсә»), Степан Кутузов («Клим Самгиндең тормошо») һәм башҡа образдар пролетар яҙыусыһының революцион ынтылыштарын сағылдырҙылар.

Совет Социалистик Республикалар Союзында Горький бөтә ғүмере буйынса көрәшкән идеалдың реаль сағылышын күрҙе. Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең яҡты киләсәген алдан күреп, Горький 1906 йылда яҙылып бөткән «Әсә» романында уҡ, үҙ геройҙарының береһенән, Россия ерҙәге иң яҡты демократия булыр, тип әйттерҙе. Горький Советтәр илен ер йөҙөндәге яҡты демократия тип данланы.

Социализм төҙөүселәрҙең яңы еңеүҙәре тураһындағы һәр бер хәбәрҙе Горький шатлыҡ менән ҡабул итеп ала ине.

— Мине бөгөн бәхетле кеше тип әйттеләр, — тине Алексей Максимович бер йыйылышта, — был дөрөҫ, беҙҙең алдыбыҙҙа уның иң яҡшы хыялдары, иң яҡшы ынтылыштары тормошҡа ашҡан ысынлап та бәхетле кеше тора...

Хәҙер совет халҡы коммунизмға инеү юлында торғанда Горький үҙенең үлемһеҙ әҫәрҙәре менән уларға әле балҡып тороусы донъяны ижад итергә ярҙам итә. Бөйөк яҙыусының һүҙе — тыныслыҡ һәм кешелек прогресы дошмандарын ҡыйратыусы беҙҙең тағы көсле ҡоралыбыҙ.

Пролетар художниктың хеҙмәт халҡына, Ленин—Сталин партияһына тәрән мөхәббәте уның иҙеүселәргә, капиталистик йыртҡыстарға, империалистик хәрби талауҙың атамандарына көслө күрә алмаусанлығын тыуҙырҙы. Горький капитализмға ҡаршы күрә алмаусылыҡ менән сығыш яһаны. Ул фашистик варварлыҡты, тарҡалған буржуаз культураны аяуһыҙ фаш итеүсе булды. Горький Американың «тормош өлгөһөндә» капиталистик ҡоролоштоң ҡот осҡос ғәрипләген күрҙе. Американдарға мөрәжәғәт итеп бөйөк яҙыусы былай тип күрһәтте: «һеҙҙең ауырыу гипертрофияланған цивилизацияғыҙ һеҙгә бик ҙур трагедиялар яһай».

Американың капиталистик варварлығын фаш итеү Горькийҙең бик күп әҫәрҙәре аша ҡыҙыл еп булып һыҙыла. Ул Горькийҙең публицистик әҫәрҙәрендә айырыуса тулы бирелгән. Горькийҙең капиталистик Американы фаш итеүсе көслө памфлеттәре: «Һары шайтан ҡалаһы», «Республика королдәренең береһе», «Мораль жрецы» әҫәрҙәре уның Америка хәбәрселәренә һәм башҡаларға яуап булып торған «Культура мастерҙәре, һеҙ кем менән?» тигән мәҡәләһе совет уҡыусыларына бик киң билдәле.

«Һары шайтан ҡалаһы» исемендәге бик көслө памфлет аҡса тоҡсайы менән аш иткән кешеләр хужа булған капиталистик Америка тормошоноң бөтә бысраҡлығын асып бирә.

Горький империалистик Америка «короллдәренең», Уолл-стрит делецтәренең кешелеккә күрә алмау асылын асып бирҙе. Америка журналының анкетаһына яуапта Горький былай тип яҙған:

«Һеҙ уйлап ҡарағыҙ, бының бөтәһе лә ниндәй ахмаҡлыҡ һәм оят: беҙ ошондай ҙур хеҙмәт менән биҙәргә һәм байыҡтырырға өйрәнгән беҙҙең гүзәл планетабыҙ, — беҙҙең бөтә еребеҙ тип әйтерлек аҡсанан башҡа бер нәмә лә яһай белмәгән кешеләрҙең бәләкәй генә ырыуының һаран ҡулдарында. Бына тигән ижади көстә — культураны беҙҙең «икенсе тәбиғәтебеҙҙе» тыуҙырыусы ғалимдарҙың, техниктәрҙең, шағирҙарҙың, эшселәрҙең ҡанын һәм мейеһен ошо ахмаҡ кешеләр һары металл түңәрәктәренә, таҫмалы чек ҡағыҙҙарына әүерелдерәләр».

Горький империалистик идеологияны конкрет сағылдырыусыларҙы һәм империалистик талауҙы рухландырыусыларҙы — Гуверҙе, Херсте, Рокфеллерҙе, Черчилльде, Гитлерҙе, Чемберлинде һәм башҡаларҙы хурлыҡлы бағанаға ҡаҙаҡланы. Горький үҙенең көслө һүҙе менән капитализмде талау һәм көсләү, баҫып алыу һуғыштары һәм ҡанлы репрессиялар системаһы, тип фаш итте.

Социалистик ижад итеү ҡаҙаныштары юғарылығынан тороп, яңы совет эпохаһының бөйөк йырсыһы Горький капиталистик «хужалыҡ итеүҙең» асыҡтан-асыҡ мәғәнәһеҙлеген һәм енәйәт булыуын асып бирҙе.

Империализмға ҡаршы Горькийҙең дәртле сатираһының тематикаһы ғәҙәттән тыш күп төрлө. Ул массаларҙы ағыулаусы Американың реакцион, һатлыҡ матбуғаты тураһында, раса күрә алмаусанлығы һәм ҡанлы талауҙарҙы яҡлаусы ялған пацифистәр тураһында һәм эшселәр синыфына хыянат итеүселәр — уң социалистәр тураһында үҙенең асыулы һүҙен әйтте.

Горькийҙең публицистик әҫәрҙәрендә культура мәсьәләләре айырыуса ҙур урын тота. Бөйөк художник культурала, фәндә, искусствола бөтә алдынғылыҡты һәм прогрессивлекте быуып тороусы капитализмде бик асыҡ һәм күрә алмаусылыҡ менән фаш итте. «Республика королдәренең береһе» памфлетендә үк яҙыусы Уолл-стрит делецтәренең аҡса көсө менән нисек итеп эзәт ижади фекерҙең һәр төрлө сағылыштарын быуып килеүҙәрен күрһәтте.

Капитализм культураны һәләк итә тип, һыҙыҡ өҫтөнә алды Горький. «Капитализм культураһы, — тип яҙҙы ул, — донъя өҫтөнән, кешеләр өҫтөнән, ерҙең хазиналары, тәбиғәттең энергиялары өҫтөнән буржуазия власын физик һәм моральный киңәйтеү һәм пығытыу ысулдары системаһынан башҡа бер нәмә лә түгел. **Буржуазия культура үҫеше процесы мәғәнәһен бөтә кешелек массаһының үҫеше өсөн кәрәк булғанлығын бер ваҡытта ла аңламаны».**

Хеҙмәтсәндәрҙең бәхете өсөн ялҡынлы көрәшсе булған Горький тыныслыҡтың яҡты идеалдары өсөн көрәшкә арыу-талыуҙы белмәй саҡырҙы. Ул һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы һәр ваҡыт иң актив көрәшкә саҡырҙы. Шуның менән бергә бөйөк гуманист фразерҙарҙы, «пацифистарҙы» «априк ҡараштағы гуманитарҙарҙы» фашланы һәм уларҙан әсе итеп көлдө.

Горькийҙең гуманизмы — революцион пролетариаттың гуманизмы. Тап бына Горький, кешене йырлаусы, хеҙмәт һәм аҡыл йырсыһы пролетар гуманизмдең гүзәл формулаһын бирҙе: «Әгәр дошман бирелмәһә, уны юҡ итәләр».

Тыныслыҡ өсөн, социализм өсөн көрәштә Горький Ленин һәм Сталин идеяларынан рухланыу алды. Ул тыныслыҡ һәм халыҡтар араһында дуҫлыҡ тураһында сталинса тышҡы политиканың ялҡынлы пропагандисы булып сығыш яһаны. Горький хеҙмәт кешеләрен ҡанлы һуғыштарҙы булдырмауға һаләтләләр, уларҙа һуғыш тоҡандырыусыларҙы ауыҙлыҡлау өсөн, бөтмәҫ-төкәнмәҫ көстәр бар тип арыу-талыуһыҙ әйтеп килде.

Бөйөк яҙыусының ғәйрәтле тауышын бөтә прогрессив кеше тыңлай ине.

Беҙҙең осорҙа тыныслыҡ лагеры көстәренең үлсәүһеҙ үҫеүендә Горький ташлаған саҡырыуҙарҙың йәнле сағылышын күрәбеҙ. Тыныслыҡ фронты үҫә һәм нығый. Империализмдең һәм уның ялсыларының бер ниндәй мәкерле эшләпеүҙәре лә күп миллионлы массаларҙың тыныслыҡҡа ҡарата булған ҡаҡшамаҫ ихтыярҙарын һындыра алмаҫтар.

Горький үлемһеҙ. Беҙҙең Горький тыныслыҡ өсөн көрәшселәрҙең, Америка-Англия яңы һуғыш уты тоҡандырыусыларға ҡаршы көрәшселәрҙең ҡеүәтле лагеренең тығыҙ сафтарында тора.

В. Панков.

Һүрәттә: И. В. Сталин һәм А. М. Горький (А. М. Горький музейы материалдарынан). (ТАСС фотохроникаһы).

Ул беҙҙең менән

Тышта бәлки йәйге төн булғандыр,
Күк йондоҙҙар менән тулғандыр,
Бер ҡарасы миңә, тигән, кеүек,
Ҡыйыҡта ай келеп торғандыр.
Тышта бәлки ҡышҡы төн булғандыр,
Тынғыһыҙ ел өшөп туңғандыр,
Йылы эҙләп аҡ ҡар бөртөктәре
Тәҙрәләргә килеп ҡунғандыр, —
Уларға һис күңел һалманым,
Сөнки минең ҡулда китап ине
Шуны ташлап китә алманым.
Төн йоҡламай лампа эргәһендә
Горький китаптарын уҡыным,
Әйтерһең дә үҙе—Максим Горький
Тормош серен һөйләп ултырҙы.
Гүйә күрҙем бөйөк көрәш өсөн
Күкрәк һөтөн бирған әсәне.
Шунда белдем тиңһеҙ ҡиммәтлеген
Ҡасҡар түгеп алған йәшәүҙең.
Ул өйрәтте хеҙмәт иртәһенең
Гудок тауыштарын тыңларға.

Ул өйрәтте ярһыу дарттар менән
Еңеү шатлыҡтарын йырларға,
Һәр асылған һайын китап бите
Уйҙар таң шикелле яҡтырҙы,
Ҡар аҫтынан сыҡҡан сәскә кеүек
Йөрәктә саф һөйөү ҡалҡынды,
Һайрар ҡоштоң тәүге йыры кеүек
Горький инде беҙҙең күңелгә,
Ватан ҡосағында йылы яҙҙай
Ул йылмайып тора бөгөн дә.
Беҙҙең күҙҙәр аша ғорур ҡарап
Һөйөп күҙләй Волга буйҙарын,
Ул бит тәрән хистәренә тиңләп
Ярата ине уның һыуҙарын.
Миллион телдәр аша һаман һөйләй
Ихтирамға хаҡлы һүҙҙәрен,
Горький һөйгән бөйөк рус ере
Коммунизм менән биҙәлер.

Нарам Бакиров.
1951

Горькийгә

Бөйөк илдең бөйөк яҙыусыһын
Күтәбеҙ беҙ уйсан йөҙөндә,
Халыҡ һәм дә ысын тормош йәшәй
Һинең әйткән һәр бер һүҙеңдә.
Гүзәл фекер,
ғәзел эштәреңә һин
Пак шиңмәһе төслө йәшәйһең;
Утлы «Дауыл хәбәрсеһе» һымаҡ
Таңғы йәшен булып йәшнәйһең.
Хеҙмәт халҡын һөйҙөң ялҡынланып
Бысраҡлыҡтың булдың дошманы,
«Дошман бирелмәһә юҡ ит» тигән
Булмау өсөн уның ортаны,
Йырҙарыңдан хеҙмәт ғорурлығын
Көрәш ауаздарын аңланыҡ,
Зәңгәр күккә менгек ыласындай,
Дауыл күкрәүен тыңланыҡ.
Йәшә Горький.
Дан маяғы һымаҡ,
Тормош көҙгөһө бит һин үҙең,
Бөгөн «Әсә» үҫтергән ҡаһармандар

Эштә гелгә биҙәй ер йөҙөн.
Улар Власов булып яу ҡуптарҙы,
Павка булып ҡыуҙы Колчакты;
Саша булып амбразураны ҡаплап
Фашист дзоттарын ҡаҡшатты.
Киң илемдә бөйөк коммунизмдең
Бүгәрәләр гигант йорттарын,
Һәм балҡыта сүлдәр сахраһында
Ильич лампаһының уттарын.
Ватан майҙанында
ен һыҙғанып
Ғәйрәтләнеп атлай киң юлға;
Даһи аҡылында
ер йәшәре,
Тыныслыҡты яҡлай бар донъя.
Йылдар үтер..
Тереләрҙән-тере
Һин йәшәрһең халыҡ күңелендә,
Һәм йондоҙҙай балҡып нур сәсерһең
Коммунизмдең аяҙ күгендә.

А. Игебаев.

Максим Горький әҫәрҙәре башҡорт телендә

Хеҙмәтсәндәребеҙҙең культура талаптары йылдан-йыл үҫә. Бигерәк тә һуғыштан һуңғы йылдарҙа художестволы әҙәбиәткә һорау артты. Әле үҫә барған талаптарҙы ҡәнәғәтләндереү нигеҙендә рус әҙәбиәте классиктәренең һәм хәҙерге совет яҙыусыларының күп кенә әҫәрҙәре башҡорт теленә тәржемә итеп баҫып сығарылды.

Башҡорт халҡы хәҙер үҙ телендә А. Пушкин, Л. Толстой, Н. Гоголь, И. Тургенев, Н. Островский, В. Маяковский, М. Горький, А. Толстой, А. Фадеев, П. Павленко, Б. Полевой һәм башҡа күренекле яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен уҡый.

Рус совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы А. М. Горькийҙең әҫәрҙәре хеҙмәтсәндәр араһында бигерәк тә ҙур популярлыҡ менән файҙалана. Һуңғы йылдарҙа ғына Башгосиздат тарафынан Максим Горькийҙең әҫәрҙәре 12 баҫма табаҡ күләмендә 26 мең данала сығарылды. Улар араһында «Челкаш», «Бала саҡ», «Минең университеттарым», «Малайлыҡта» һәм башҡа әҫәрҙәр бар.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәрен бөйөк яҙыусының ижады менән киңерәк таныштырыу маҡсатында әле башҡорт телендә А. М. Горькийҙың ... баҫма табаҡ күләмендә һайланма әҫәрҙәр йыйынтығы сығарыласаҡ. Унда «Ыласын тураһында йыр», «Дауыл хәбәрсеһе тураһында йыр», «Ҡыҙ һәм үлем», «Кеше» һәм башҡа әҫәрҙәр инәсәк.

БӨЙӨК ЯҘЫУСЫ ХӨРМӘТЕНӘ

Республикабыҙҙың башҡалаһы хеҙмәтсәндәре бөйөк рус яҙыусыһы Алексей Максимович Горькийҙе иҫкә алыу көнөнә ҙур әҙерлек менән килделәр. Предприятиеләрҙә, учреждениеләрҙә, уҡыу йорттарында һәм культура-ағартыу учреждениеләрендә бөйөк яҙыусының тормошона һәм ижадына арналған әҙәби кисәләр уҙғарылды, лекциялар уҡылды һәм уның әҫәрҙәре буйынса китап уҡыусылар конференциялары үткәрелде. Библиотекаларҙа, ҡыҙыл мөйөштәрҙә һәм уҡыу залдарында китап күргәҙмәләре, фотовитриналар ойошторолдо. Кисә республика уҡытыусылар йортонда ҡала уҡытыусылары өсөн «А. М. Горький — империалистик реакцияға ҡаршы көрәшсе» тигән темаға әҙәби кисә уҙғарылды. Залда бөйөк яҙыусының ижады эшенә һәм тормошона арналған фотокүргәҙмәне тамашасылар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар. Лекциянан һуң уҡытыусылар йортонон художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәге ағзалары Горький әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡынылар.

Р. Хәсәнова.

МАКСИМ ГОРЬКИЙ

ҺАРЫ ШАЙТАН ҠАЛАҺЫ

...Океан һәм ер өҫтөндә ҡуйы булып төтөн ҡатнаш томан аҫылынып тора, ваҡ ямғыр ҡала биналарына һәм рейдтең болғансыҡ һыуына ялҡау ғына һибәләй...

Пароход бортына эмигранттар йыйылғандар, улар тирә-яҡтағы бөтә нәмәгә әмәт һәм борсолоу, ҡурҡыу һәм шатлыҡ менән текәлеп ҡарайҙар.

Бер поляк ҡыҙы, ғәжәпләнеп, Азатлыҡ статуяһына күрһәтә лә:

— Был кем? — тип һорай. Кемдер бераү уға яуап бирә:

— Америка аллаһы...

Бронза ҡатындың массив фигураһы аяғынан башына тиклем йәм-йәшел булып тутыҡҡан. Уның һалҡын йөҙө томан аша һуҡырҙарса океан киңлегенә ҡарай, әйтерһең дә, ул йәнһеҙ күҙҙәрен ҡояшты күреүһеҙ ҡояш көтә. Азатлыҡтың аяҡ аҫтындағы ер бик бәләкәй. Азатлыҡ үҙе океан өҫтөнән ҡалҡып сыҡҡан кеүек булып, ә уның пьедесталы — туңып ҡалған тулҡындар кеүек булып күренә. Уның океан өҫтөнән һәм карапта‌рҙың мачталары өҫтөнән юғары күтәрелгән ҡулы ҡиәфәтенә мағрур бөйөклөк һәм матурлыҡ бирә. Ул бармаҡтары араһына бик ҡаты ҡыҫып тотҡан факел ҡапыл яҡты булып тоҡаныр кеүек ҙә, һорғо тирә-яҡта тарҡатыр һәм тирә-яҡта бөтә нәмәне йомарт рәүештә шатлыҡлы, ҡайнар нурға ҡойондорор кеүек тойола.

Азатлыҡ баҫып торған юҡ дәрәжәһендәге бәләкәй ер киҫәгенең әйләнәһендә, океан өҫтөндә, туфандан әлеккеге януарҙар кеүек, бик ҙур тимер карапта‌р йөҙә, әс йыртҡыстар кеүек, бәләкәй катерҙар сабып үтә, Әкиәттәге гиганттар ауаҙына оҡшап, сиреналар үкерә, асыулы һыҙғырыуҙар ишетелә, якорь сынйырҙары шылтырай, океан тулҡындары яуызланып шаулай.

Тирә-яҡта бөтә әйбер югерә, ашҡына, ҡеүеренке ҡалтырана. Пароход винттәре һәм ҡалаҡтары ашығып-ашығып шапылдай — һыу һары күбек менән ҡапланған, йыйырсыҡланған.

Һәм гүйә бөтә нәмә — тимер ҙә, таштар ҙа, һыу ҙа, ағас та, — ауыр хеҙмәткә ҡол булып, ҡояшһыҙ, йырһыҙ һәм бәхетһеҙ йәшәүгә ҡаршы протест яһай төҫлө. Бөтәһе лә, кешегә дошман булған ниндәйҙер бер йәшерен көстөң иркенә буйһоноп, ыңғыраша, олай, тешен шығырҙата. Һәр ҡайҙа, тимер менән өҙгөләнгән һәм яраланған, майлы нефть тамсылары менән бысранған, йомоҫҡа, һалам һәм ашамлыҡ ҡалдыҡтары менән сүпләнгән һыу күкрәгендә — күҙгә күренмәй торған һалҡын һәм үҫал бер көс эш алып бара. Әле ҡолас ғынаҫлыҡ машинаны ул һаман да бер төрлө һәм үҫал хәрәкәтләндереп тора. Карапта‌р, доктар— машинаның бәләкәй киҫәктәре генә, ә кеше — тимер менән ағастың ғәрип, бысраҡ үрелмәләрендә, карапта‌рҙың, кәмәләрҙең һәм вагондар тейәгән ниндәйҙер яҫы баржаларҙың хаосында, күҙгә күренмәй торған бер винт кеүә.

Шау-шыуҙан һаңғырауланған, хайранға ҡалған һәм үле материяның әле бейеүенән аптыраған ике аяҡлы зат, ҡара ҡоромға һәм майға батҡан хәлдә, ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, сәйер итеп миңә ҡарап тора. Уның йөҙө майлы бысраҡтың ҡуйы ҡатламы менән ҡапланған, һәм уның йөҙөндә тере кеше күҙҙәре түгел, ә аҡ тештәр генә ялтырай.

* * *

Карап бүтән карапта‌р араһында аҡрын ғына шыуыша. Эмигранттарҙың сырайҙары ғәжәп, күңелһеҙләнде, улар миңгерәүләнеп киттеләр, хатта күҙҙәрен дә ниндәйҙер һорғолт һәрем ҡапланы. Кешеләр бортта баҫып торалар һәм һүҙһеҙ генә томан эсенә ҡарайҙар.

Әле томан эсендә шау-шыу менән тулған ниндәйҙер аҡыл етмәҫлек ҙур бер әйбер тыуа, үҫә, ул кешеләр өҫтөнә үҙенең әшәке, ауыр һулышын һулай, уның шау-шыуында ниндәйҙер дәһшәтле ҡомһоҙлоҡтоң барлығы һиҙелә.

Был — ҡала, был — Нью-Йорк. Яр буйында егерме ҡатлы ҡараңғы йорттар, «күк ҡимереүселәр»*) тып-тын ғына теҙелешеп торалар. Матур булыу теләгенән мәхрүм ҡалған әле дүрткел, тупаҫ, ауыр биналар күңелһеҙ һәм сытыҡ рәүештә юғарыға күтәреләләр. Һәр бер йортта үҙенең бейеклегенә, ғәриплегенә менән мәғәнәһеҙ ҡапарайыу һиҙелә. Тәҙрә тептәрендә сәскәләр юҡ һәм балалар ҙа күренмәй...

Алыҫтан ҡала тигеҙһеҙ ҡара тешле ҙур бер ауыҙ булып тойола. Ул төтөн болоттары менән күккә һулай һәм һимеҙлек ауырыуына дусар булған бирән кеүек мышнай.

Уға килеп инеүгә үҙеңде таш менән тимерҙән торған ашҡаҙанына төшкән кеүек һиҙәһең, был ашҡаҙаны инде бер нисә миллион кешене йотҡан, ул уларҙы иҙә, ҡайната.

Урам — тайғаҡ, ҡомһоҙ буғаҙ; шул буғаҙ буйлап ҡайҙалыр эскә табан ҡала ашамлығының ҡара һыныҡтары — тере кешеләр ағыла. Һәр ҡайҙа — баш өҫтөндә лә, аяҡ аҫтында ла, һинең менән йәнәшә лә, үҙенең еңеүҙәрен тантана итеп, тимер йәшәй, тимер күкрәй. Алтын көсө менән барлыҡҡа килгән, алтын тарафынан рухландырылған шул тимер — кешене үҙенең йәтмәләре менән ҡамап ала, уны миңгерәүләндерә, уның мускулдарын, нервыларын кимерә һәм, йәнһеҙ ташҡа таянып, сыңйыр алҡаларын һаман да киңерәк йәйеп, үҫкәндән-үҫә бара.

Локомотивтар, вагондарҙы һөйрәп, бик ҙур сөүәлсәндәр кеүек шыуыша, автомобиль сиреналары һимеҙ өйрәктәр кеүек быжылдай, электр күңелһеҙ генә олой, бөркәү һауа үкереп торған меңдәрсә ауаз менән тулған. Ул әле бысраҡ ҡала эсенә килеп ҡыҫылған, фабрикалар төтөнө менән бысранған һәм шуға күрә лә ул ҡоромға күмелгән бейек стеналар араһында хәрәкәтһеҙ тора.

* * *

Майҙандарҙа һәм туҙанлы, йәнһеҙ япраҡлы ағастар үҫеп торған бәләкәй баҡсаларҙа — ҡара монументтар. Уларҙың йөҙҙәре ҡалын бысраҡ менән ҡапланған, ҡасандыр Ватанға мөхәббәт менән янған күҙҙәрен ҡала туҙаны күмгән. Бронзанан ҡойолған был кешеләр — йәнһеҙ һәм күп ҡатлы йорттар йәтмәһендә япа-ялғыҙ булып торалар. Улар бейек стеналарҙың ҡара күләгәләре ҡарағында кәртә булып күренәләр. Улар тирә-яҡтағы аҡылһыҙлыҡ хаосында аҙашҡандар, туҡтап ҡалғандар һәм, ярым һуҡырайған хәлдә, күңелһеҙләнеп, йөрәктәре менән әрнеп, аяҡ остарында кешеләрҙең ҡомһоҙ рәүештә ығы-зығы килеүҙәренә ҡарап торалар. Кешеләр, бәләкәй һәм ҡара кешеләр, ҡабаланып, монументтар янынан ҡыҙыу-ҡыҙыу үтеп киткәләр, һәм береү ҙә геройҙың йөҙөнә күҙ ташламай. Азатлыҡты ижад итеүселәрҙең әһәмиәтен капитал ихтиозаврҙары кешеләр хәтеренән ҡырып алғандар.

Гүйә, бронза кешеләр бөтәһе лә бер үк ауыр уйға сумғандар.

— Мин шундай тормош барлыҡҡа килтерергә теләгәйнемме ни?

Тирә-яҡта плиталағы һурпа кеүек, биҙгәкле тормош ҡайнай. Бәләкәй генә кешеләр, һурпалағы ярмалар һымаҡ, диңгеҙҙәге йомосҡалар кеүек, шул ҡайнау эсендә югерәләр, бөтөрөләләр һәм юҡ булалар. Ҡала үкерә һәм уларҙы, береһе артынан береһен, үҙенең ҙур, ҡомһоҙ ауыҙы менән йота.

Геройҙарҙың ҡайһы берҙәре ҡулдарын түбән төшөргәндәр, ҡайһы берҙәре, юғары күтәреп, кешеләрҙең баш өҫтөрөнән һуҙғандар, улар һаҡ булырға ҡушалар:

— Туҡтағыҙ! Тормош түгел был, аҡылһыҙлыҡ был...

Урам тормошоноң хаосында — улар бөтәһе лә кәрәкһеҙ, ҡомһоҙлоҡтоң ҡырағай үкереүендә, таштан, бысранан һәм тимерҙән туҡылған сытыҡ фантазияның тар тотҡонлоғонда уларҙың береһе лә үҙ урынында түгел.

Төндәрҙән бер төндө уларҙың барыһы ла ҡапыл үҙҙәренең пьедесталдарынан төшөрҙәр ҙә, мыҫҡыл иткән кешеләр кеүек ауыр атлап, урамдарҙан уҙырҙар, үҙҙәренең яңғыҙлыҡ һағыштарын ҡала ситенә, далаға алып китерҙәр. Унда нурлы ай көлөп ҡарай, унда һауа бар һәм тыныслыҡ бар. Кеше ғүмере буйы үҙ ватанының бәхете өсөн тырышҡан икән, шуның менән ул, һис шикһеҙ, үлгәндән һуң уны тыныслыҡта ҡалдырыу хоҡуҡын яулап алды тиген һүҙ.

* * *

Тротуарҙар буйлап, теге яҡҡа ла, был яҡҡа ла, урамдарҙың бөтә йүнәлештәрендә кешеләр ашығып-ашығып ҡайҙалыр баралар. Таш стеналарҙың тәрән күҙәнәктәре уларҙы үҙҙәренә һура. Тимерҙең тантаналы геүләүе, электрҙың ҡысҡырып олауы, металдан яңы йәтмә төҙөү, таштан яңы стеналар һалыу буйынса барған эштәрҙең күкрәп торған шаушыуы — бына шуларҙың бөтәһе лә океандағы өйөрмә ҡоштар тауышын ишеттермәгән кеүек, кешеләр тауышын да ишеттермәй.

Кешеләрҙең йөҙҙәре хәрәкәтһеҙ тыныс. Күрәһең, уларҙың береһе лә тормоштоң ҡол булыуҙың, әкиәттәге януарҙай ҡалаға аҙыҡ булыуҙың бәхетһеҙлеген һиҙмәй булһа кәрәк. Үҙҙәре тураһында ҡыҙғанысһыҙ рәүештә юғары ҡарҙа тороп, улар үҙҙәрен үҙ яҙмыштарының хужаһы тип һанайҙар — ҡайһы саҡта уларҙың күҙҙәрендә бойондороҡһоҙлоҡ аңы балҡый, ләкин күренеп улар аңламайҙар: был бойондороҡһоҙлоҡ — балта оҫтаһы ҡулындағы балтаның, тимерсе ҡулындағы сүкештең, ләкәр йылмайып, һәр кем өсөн бик тыныс ... ләкин тар төрмә һала торған күҙгә күренмәҫ таңсы ҡулындағы кирбестең бойондороҡһоҙлоғо ул. Энергиялы йөҙҙәр күп, ләкин һәр кемдең йөҙөндә бөтәһенән дә элек уның тештәрен күрәһең. Кешеләрҙең күҙҙәрендә эске азатлыҡ, рух азатлығы һиҙелмәй. Азат булмаған шул энергия әлегә үткерләгән юйма бысаҡтың һалҡын ялтырауын иҫкә төшөрә. Был — Һары шайтан ҡулындағы, Алтын ҡулында һуҡыр ҡорал булған хеҙмәт итеүселәр азатлығы.

Шундай ҡот осҡос ҡаланы мин беренсе тапҡыр күрәм, һәм кешеләрҙе мин бер ваҡытта ла әле шул тиклем юҡҡа сығарылған, шул тиклем ҡол ителгән хәлдә күргәнем юҡ ине. Шуның менән бергә минең һис ҡайҙа кешеләрҙең ҡомһоҙлоғо арҡаһында әлйот булып әүерелгән мескен хайуандарса ҡырағай үкереп, мейеләре нервыларҙы кимерә торған бына ошо күренештең ҡомһоҙ һәм бысраҡ ашҡаҙанындағы кешеләр кеүек трагикомик рәүештә үҙҙәренән ҡәнәғәт хәлдә осратҡаным юҡ ине...

*) «Скребница неба» мәғәнәһендә. Америкалағы бик күп ҡатлы йорттарҙы «небоскреб» тип атайҙар. Ред.

ГАЗЕТА-ЖУРНАЛДАР—МАССАҒА!

Газета һәм журналдарға подписка үткәреүҙә Илеш районы ес йыл инде республиканың алдынғы сафта килә. Быйыл ҙа подписка кампанияһы ла бында әүҙем алып барыла.

ВКП(б) райкомы (секретары иптәш Хәсәнйәнов) газета һәм журналдарға подписка үткәреү мәсьәләһен бюро ултырышында карап, тишерҙе һәм партиялың түгге ойошмаларына конкрет күрһәтмәләр бирҙе. Бүлгә утаслово ултырышлы рәйсе ВКП(б) райкомының пропаганда бүлеге (мөдире иптәш Шакирйәнов) системаһы тикшерҙе торҙо. Бюро ултырышында бер нисә түбә партия ойошмаһы секретаренең подписка барышы тураһында информацияһын тыңланды.

Район Советы исполкомы (председателе БАССР Верховный Советы депутаты иптәш Ғ. Каганов) газеталарға яҙылыу мәсьәләһен исполком ултырышында ҡараны. Бында район связь бүлеге начальнигы иптәш Йугилдиндең докладын тыңланы. Шул уҡ ултырышта райондағы почта бүлекселарының начальниктәре, агентство мөдирәре, почтальондар ҡатнашты.

Район исполкомы газета-журналдар таратыу һәм уны подпискаһын үткәреү мәсьәләһен район Советының сессияһына ҡуйып тикшерҙе. Депутаттарҙан Галиев, Яфаев, Әхмәтов һәм башҡа иптәштәр был эштең бик әһәмиәтле икәнлеге тураһында ҡыҙыу фекер алыштылар. Һәм бәтә депутаттар ҙа подписка үткәреүҙә әүҙем ҡатнашлыҡ итеүҙәре тәлап ителгәнлеген әйттеләр. Сессия подписка кампанияһын уңышлы үткәреү өсөн ҡатнашыусы һәм районға бирелгән заданиены артығы менән үтәргә ҡарар итте.

Газеталарҙы ауылдарға районда ҡатнашыусы актив ҡатнашлыҡ итте. Базытамаҡ ауыл Советының нисә йыллыҡ мәктәп директоры Девятов, шул уҡ ауыл Советында урдаларҙа колхоз председателе Зайнашев, Исайбай ете йыллыҡ мәктәп директоры Ахунйәнов, Исәмәт ете йыллыҡ мәктәп директоры Ғалиханова, Мансар урта мәктәбе директоры Байгилдин, Дәмәй урта мәктәбе директоры Ғабидулин шул уҡ ауыл Советы депутаты «Баш партизан» колхозы председателе Зарипов иптәштәрең ауыл эшләүсәрен айтеп үткәрә торҙо.

Почта бүлеге работниктарынан — Баһирйанов — Ризметдинов, Исәнбайға — Ғазизова, Рсайба — Шәйхулин, Исәмәт — Гереева, Мансарҙа — Исәмғолов иптәштәр был мәсьәлә уларға таҡшырылған эште намыҫ менән башҡаралар.

Иптәштәрең үҙ ойошканлыҡ менән эшләүҙәре арҡаһында Базытамаҡ ауыл Советындағы колхозсыларҙа һәр бер йортҡа бер дана газета алдырыла.

Райондағы общественноҫт актив ҡатнашыуы һөҙөмтәһендә Илеш районында ғына хеҙмәтсәндәр 6 мең 730 дана газета һәм 1 мең 777 дана журнал алдыралар.

Районда «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһын таратыу 1000 данаға барып етте. «Ҡыҙыл Таң», «Ленинсе», «Ленинец» газеталарын шулай уҡ уңышлы таратыла. Йыл ахыры ғына алыған ғына «Әҙәби Башҡортостан» журналы 130 дана таратылды. Илеш районында сыға торған «Сталинсе» газетаһының тиражы ла пландан артып китте.

Газеталарҙы һәм журналдарҙы ташыу һәм подпискаһын үткәреү эше бик әһәмиәтле. Иптәш Ленин «Совхоздарҙың бөтә работниктары быны бик ныҡ хәтерҙә тоторға, хеҙмәтсәндәрҙән талаптарын ҡәнәғәтләндерергә тейештәр.

Ләкин ҡайһы бер урындарҙа газета-журналдар менән һаҡы подпискаһын ҡуйылап ташлаған. Мәҫәлән, аҡса кә-та-журналдар экспедицияһының тейеш буйынса Чернико (иптәш Носеров) 1950 йылдың 29 декабренән Илеш районына 100 дана «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһын һәм өбәрелә. Шунда уҡ урында көт терелеп, тулмаған газетаны эбәреү һорала. Ләкин был һорау ҡәнәғәтләндерелмәй. Иптәш Иванков бер нисә кеп үткә, «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы урынына 100 дана «Красная Башкирия» газетаһы эбәрә. Икенсе бер факт. Уҙған йылдың 13 ноябренән Өфөнән 220 дана «Ҡыҙыл Таң» һәм 79 дана «Красная Башкирия» газеталары эбәрелмәй ҡала. Был турала иптәш Новикова районҙан ентекле бүлек ҡалып урайлый.

Район үҙәгендәге хат ташыусы иптәш Шахтов район ойошмаларына, учреждениеларына, предприятиеларына газеталарҙы ваҡытында килгәс кендә үҙ таҡшыра. Ә ойҙарына яҙылған подпискаторго 4-5 көн һуңлап алып китә. Һөҙөн ауылына Исәмәт почта бүлегенән газеталарҙы 10 — 12 көнлө һуңлатып эбәрелә.

Был факттар почта работниктарынан конкрет һәм оператив эш талап итә. Подписчиктарға газеталар һәм журналдар үҙ ваҡытында тапшырылырға тейеш.

Башҡортостан связистары большевистик матбуғатты таратыу һәм уны подпискаһын үткәреү эшен уңышлы башҡарыу өсөн ауылдың алдынғы кешеләре менән йәтеш урындарҙы туҙбеламдан бәтә работниктарынан айырып эшлә дөйөм ойошмаларының булыусылыҡ талабын үтәргә тейеш. Газеталарҙы ойошмаларының актив корреспонденттары ла ҡатнашырға тейеш.

Ғәзел Үлмәсов.

Атҡаҙанған уҡытыусы етәкселек иткән мәктәптә

Салауат районының Насибаш урта мәктәбенә күп йылдарҙан бирле Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Абдулла Хәйрулин етәкселек итә. Уҡ уҡытыу-тәрбиә эштәрен яҡшыртыу һәм мәктәптә хужалыҡты нығытыу буйынса ҙур тырышлыҡ менән эшләй. Бында стахановлар мәктәп быйыл тәүләлә. 1950 йылда мәктәп аргыһында комсомолдың XI съезды исеменәгә ҙур бакса булдырылды. Унда хәҙер 5 000 төп яңылан, 250 төп алма ағасы, 100 төп хаҡтаһы ағаслары һәм муяйл ағасы үҫтерелә.

Мәктәп Дүртөйлә районы общественностенә яңы уҡыу йылына әҙерлеккә турындағы мәрәжәғәтен тулып ҡарынланы. Насибаш ауыл Советы хеҙмәтсәндәренең бәтә районға мәрәжәғәтен ойошторған инициатива булды.

Хәҙер был мәктәп мәрәжәғәт буйынса алынған топ пунктарҙы үтәнә лә инде. Мәктәп йәшендәге бәтә балалар иҫәпкә алынды. Уҡытыусылар һәм өлкән класс уҡыусылары өсөн мәктәпкә 500 кубометр урыныла 535 кубометр утын әҙерләнде, был өсөн 3 тонна массаны өсөн урынен үткәрелә.

Мәктәп директорының уҡытыусыларын ныҡлы белем алыуҙарына аҙағешеү менән ҙур хаклорақтар, тура. Хәҙер класстар арбаһында уҡыу китаптары һәм кампаштырыу эштәре алын бара. Килгән уҡыу йылы өсөн 10 меңдән артыҡ дана дәфтәр, 1280 һумлыҡ кургәҙмә пособиелар, мәктәп библиотекаһы өсөн 1200 һумлыҡ яңы китаптар алынды. Ауылдаштар иң менән улары эште. 10 уҡыусы әҙерлек курсына килеп, 15 көйкаған торған интернат тоҙорыу эше ҙаулап итте.

Мәктәп былы йәйгә тотмақт ыйғешгә булғырыла лаблашттырып. Был эштә 60 урын менән ал урын һәм 30 аҫрағас эй буалдығлары. Хәҙер унда 2 телке, 2 ҡуян балаһы һәм башҡа йәнлектәр бар.

Ш. Хәйруллин.

Яңы уҡыу йылын тулы әҙерлек менән ҡаршы алырға

1951—1952-се уҡыу йылын тулы әҙерлек менән ҡаршылау — Черниковск ҡалаһының партия совет һәм хужалыҡ ойошмаларының иғтибар үҙәгендә тора.

Мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү мәсьәләһе ҡала Советы исполкомының ултырышында тикшерелде. Бында яңы уҡыу йылына әҙерлекте үҙ ваҡытында тамамлауға йүнәлтелгән конкрет саралар билдәләнде. Ҡала Советы үҙенең ҡарарында күп кенә мәктәптәрҙе ремонтлау эшен төҙөлөш ойошмаларына йөкмәтте.

Был ҡарар нигеҙендә төҙөлөш предприятиеларына мәктәптәрҙе ремонтлауҙы үҙҙәренең ҡышҡа әҙерлек эштәре графигына индерҙеләр. Бөтә мәктәптәргә лә шефлыҡ итеүсе предприятиелар беркетелде. Улар хәҙер ремонт эштәрен башлауға ҙур әҙерлек алып баралар. Мәҫәлән, дәүләт план буйынса быйыл 15-се мәктәпкә капиталь ремонт үткәреү билдәләнмәгәйне. Был мәктәп өҫтөнән шефлыҡ итеүсе фанера комбинаты (директоры иптәш Майоров) мәктәпкә тулыһынса капиталь ремонт үткәреүҙе һәм уны яғыулыҡ менән тәьмин итеүҙе үҙ өҫтөнә алды.

Ҡала мәктәптәренең өстән бер өлөшө хужалыҡ юлы менән ремонтланасаҡ. Уларҙы ремонтлау өсөн 130 рулон толь, етерлек күләмдә ҡаҙаҡ, әҙбиз, олиф һәм башҡа төр төҙәү материалдары әҙерләнде. 1-се һәм 14-се мәктәптәргә капиталь ремонт уҙғарыласаҡ. Уның түбәһен ябыу өсөн етерлек күләмдә ҡалай һатып алынды.

Бөтә мәктәптәр һәм уҡытыусылар өсөн талап ителгән 5215 кубометр утын тулыһынса әҙерләнде.

Быйыл ҡалала 880 урынлы бер һәм 400 урынлы ике яңы мәктәп төҙәлә. Улар өҫтөнән шефлыҡ итеүсе предприятиелар тарафынан 750 парта, 25 класс таҡтаһы, 500 ултырғыс, шкаф, диван һәм башҡа мебелдәр эшләтеү өсөн заказдар бирелде. Улар июль айында әҙер буласаҡ.

Яңы уҡыу йылында ҡаланың мәктәптәрен педагогик кадрҙар менән комплектовать итеү эшенә лә серъез иғтибар бирелә. Быйыл Черниковск мәктәптәренә өҫтәмә рәүештә 100-ҙән артыҡ уҡытыусы талап ителә. Хәҙер, педагогия институтын тамамлап сыҡҡан 19 уҡытыусы эшкә ҡабул ителде лә инде. Йәйге каникул осоронда 100-ҙән артыҡ уҡытыусы төрлө курстарҙа уҡып үҙҙәренең белемдәрен күтәрәсәктәр.

Хәҙер ҡалала мәктәп йәшенә еткән балаларҙы иҫәпкә алыу эштәре үткәрелә. Мәктәптәрҙе дәреслектәр һәм күргәҙмә пособиелар менән тәьмин итеү буйынса ла конкрет саралар күрелә.

Ләкин был тәңгәлдә күп кенә етешһеҙлектәр ҙә бар.

Мәҫәлән яңы уҡыу йылына әҙерлек эштәренә ассигновать ителгән средствонан мәктәптәргә бөгөнгә көнгә тиклем бер тин дә аҡса ебәрелмәгән. Был, әлбиттә, ремонт эштәрен киң йәйелдереп ебәреүгә ҙур тотҡарлыҡ яһай. Яңы мәктәптәрҙе төҙәү эше лә бик һүлпән бара. Бигерәк тә Фурманов урамында һалына торған мәктәп яңы уҡыу йылына төҙәлеп бөтмәү ҡурҡыныс аҫтында тора. Шулай уҡ күп кенә уҡытыусылар әлегә тиклем торлаҡ менән тәьмин ителмәгәндәр.

Был етешһеҙлектәрҙе ваҡытында бөтөрөү, алда торған бурыстарҙы тулыһынса үтәп сығыу ғына, яңы уҡыу йылын тулы әҙерлек һәм ҙур ойошҡанлыҡ менән башлап ебәрергә мөмкинлек бирәсәк.

М. Мостафин.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Яҡшы, туҡлыҡлы силос һәм япраҡ әҙерләү

Общественный малсылыҡ өсөн аҙыҡ базаһы булдырыуҙа силостың әһәмиәте бик ҙур. Ул—малдар өсөн ҙур файҙалы һәм арзан етештерелә торған аҙыҡтарҙың береһе.

Силос һутлы аҙыҡ. Уның составында 60 — 70 процент һыу һәм башҡа күп кенә туҡлыҡлы матдәләр бар. Силосланған үләндә витаминдар боҙолмай һаҡлана. Силос малдарҙың продуктивлоғон арттыра.

Республикабыҙҙың колхоздарында быйыл 350 мең тонна һәм совхоздарҙа 30 мең тонна силос әҙерләнергә тейеш.

Силос әҙерләү техникаһы ҡатмарлы эш түгел. Үләндәрҙе силослау тәрән һәм киң итеп ҡаҙылған ҡоҙоҡса траншеяларҙа үткәрелә. Уртаса алғанда траншеяларҙың тәрәнлеге 3 — 3,5 метр, киңлеге 4 — 5 метр һәм оҙонлоғо 15 — 20 метр итеп ҡаҙыла. Бер кубометр урында 5 — 6 центнер силос әҙерләнә. Үләндәрҙе шулай уҡ түңәрәк ямдарҙа силосларға мөмкин. Уртаса алғанда ямдарҙың тәрәнлеге 4 метр, киңлеге 3 метр була.

Траншея, ямдарҙы ҡаҙығанда йәки башнялар төҙәгәндә ҡалҡыулыраҡ һәм мал аҙбарына яҡын, шулай уҡ тиреҫ шыйыҡсаһы ағып инмәҫлек ерҙәрҙе һайлап алырға кәрәк. Траншея һәм ямдарҙың стеналарына, төбөнә бөрәҙ ҡат таш йәки кирбес теҙеп, балсыҡ йәки әҙбиз менән һалына. Үткән йылғы силос соҡорҙары һәм башнялары хәҙер үк таҙартыла һәм дезинфекция үткәрелә. Дезинфекция үткәреү өсөн, 10 литр һыуға 2 килограмм ямаған әҙбис һәм 800 грамм карасин ҡушылып иретмә әҙерләнә. Был иретмә бер квадрат метр майҙанға бер литр иҫәбенән һибелә. Бының һуңында траншея, башня һәм уларҙың эстәре 3 — 4 көн киптерелә.

Башҡортостан шарттарында үҫә торған бөтә төр үләндәрҙә лә силосларға ярай. Тик малдар өсөн ҡайһы бер зарарлы үләндәрҙән: аҡһырғаҡ, тилә борсаҡ, шайтан таяғы үләне, асы әрем үләндәрен генә ҡушмаҫҡа кәрәк. Көнбағыш, кукуруза, люцерна, ҡабаҡ, һоло ҡатнаш ипкә һабаҡтарынан туҡлыҡлы һәм тәмле силос әҙерләнә. Былардан башҡа кесерткән, шыма кәшсә, билсән, ҡамыш, күрән, ҡара әрем, ҡуҙғалаҡ, алабута һәм башҡа шундай үләндәрҙең силосы яҡшы була. Ваҡ ағас ботаҡтары, япраҡтары, йәшелсә, картоф һабаҡтары, сөгөлдөр, турнепс, кишер, помидор япраҡтары, һабаҡтары, кәбеҫтә япрағы һәм башҡа шуның кеүектәрҙе силосларға ярай.

Көҙ курпылар файҙаланылмай ҡалыусан. Ямғырлы ваҡыттарҙа был курпыларҙы ла силослауҙы киң ҡулланырға кәрәк. Сәсеүлектәрҙән утамған ҡый үләндәрен силосларға ярамай. Сөнки улар балсыҡлы булалар. Үләндәрҙе силос соҡорона һалыуҙан элек, ямдың һәм траншеяның стеналары һәм иҙәндәре һыу менән сылатыла.

Силос соҡорона һалынасаҡ үләндәрҙең еүешлеге 65 — 70 процент булырға тейеш. Быны түбәндәгеҫә белергә була. Яңы ғына сабылып, йыйылған үләндән бер килограмм үлсәп алынып, кән йылыһында 2 — 3 сәғәт киптерелә. Был ваҡыт эсендә силос өсөн сабылған башҡа үләндәр кибә тора. Ошо ваҡыт үтеү менән был үлән үлсәнә.

Ямғырлы көндәрҙә еүеш үләндәрҙе силослағанда бер аҙ ҡоро һалам йәки кәбәк ҡатнаштырып силослау яҡшы була. Силос соҡорона тултырыу алдынан эре һабаҡлы үләндәр 3 — 4 сантиметр оҙонлоғонда ҡалдырып тураҡлана. Үләндәрҙе тураҡлауға трактор коса менән эшләй торған силос турағыс машина ҡулланыла.

Был эште колхоздарҙа МТС машиналары бик еңел башҡара алалар. Әгәр ҙә был машина булмаһа, үләндәрҙе балта, ҡорос һәм башҡа ҡоралдар менән тураҡларға була. Картоф, сөгөлдөр, кишер, кәбеҫтә япраҡтары, һабаҡтары тураҡламай һалына. Ошо рәүешсә әҙерләнгән үлән силос соҡорона шул сәғәттә үк һалына. Ям, траншея һәм башняларҙы 2 — 3 көн эсендә тултырырға, һәр бер метр ҡалынлығында һалынған үлән ҡатламы һәйбәт ныҡлап тәйгәсләргә кәрәк. Ҙур траншеяларҙа силос массаһын тәйгәсләү трактор ярҙамы менән үткәрелә. Тәйгәсләү менән силос массаһы араһына һауа инмәй, 35 — 40 градус йылылыҡ барлыҡҡа килә. Нигә ошо шарттарҙа һауаһыҙ йәшәй торған бактериялар үрсеп, улар тәьҫире менән төрлө әселектәр барлыҡҡа килә. Һөҙөмтәлә силос соҡоронда үлән серемәй, боҙолмай, яҡшы, тәмле еҫле силос әҙерләнә. Траншея һәм ямдарҙың өҫтөн дөрөҫ ябыуға ныҡ иғтибар итергә кәрәк.

Тураҡланған үлән траншея һәм ямдарҙың өҫтөнә сығып торорлоҡ итеп тултырылғандан һуң, силос массаһы өҫтөнә 15 — 20 сантиметр ҡалынлығында кәбәк йәки ҡоро һалам түшәлә. Ошо кәбәк йәки һалам өҫтөнә 10—15 сантиметр ҡалынлығында балсыҡ һалына. Бының һуңында 40—50 сантиметр ҡалынлығында ҡоро тупраҡ һалынып, өҫтө ҡалын итеп, тиреҫ менән ябыла. Көҙ һәм яҙ көндәрендә ямғыр, ҡар һыуҙары силос соҡорона ағып төшмәһен өсөн соҡор тирәһенә ҡанау ҡаҙыла. Башняларҙың түбәһе, ишектәре махсус ҡапҡастар менән ябылып, өҫтө балсыҡ йәки әҙбис менән һылана.

Урмандарҙа үҫә торған ҡайын, саған, уҫаҡ, имән, миләш, юкә, алма ағастарының ваҡ ботаҡтары менән япраҡтары малдар өсөн яҡшы аҙыҡ булалар.

Ботаҡ-япраҡ аҙыҡтар июнь һәм июль айҙарында әҙерләнергә тейеш. Сөнки был ваҡыттарҙа ағастарҙың япраҡтары күп эре, яҡшы сифатлы һәм йәш ботаҡтарҙың күпләп үҫкән осоро була.

Быйыл республикабыҙҙың урманлы райондары колхоздарында 45 мең тонна ботаҡ-япраҡ аҙыҡтары әҙерләү үткәреләсәк. Урманды тотош ҙур участкалар менән ҡырҡырға тура килһә, ул ваҡытта ҡырҡылған ағастарҙың ботаҡтары-япраҡтары йыйналып алына. Үҫеп ултырған ағастарҙан йыйнарға тура килһә, был эште киләһе икенсе яртыһында, ҡыҫҡа табан башҡарырға кәрәк. Сөнки ҡыҫҡа табан үҫемлектәрҙең япраҡтарында туҡлыҡлы матдәләре күп әҙерләнгән була. Ботаҡтарҙың иң тиклем нәҙеге йыйналһа, шул тиклем япраҡлы була. Шуға күрә лә ҡырҡылып алынған ботаҡтарҙың йыуанлығы бер сантиметр, оҙонлоғо 60—90 сантиметр булыуы яҡшы.

Ҡырҡылып алынған ботаҡтар ҡулағала киптерелергә тейештәр. Киптереү өсөн һеперткә кеүек итеп, келтә рәүешендә япраҡһыҙ урындарынан бәйләргә һәм ялма эсендәге ҡаштаҡларға, йәки көн ҡояшлы булғанда ергә таратып киптерелә.

Ошо урындарҙа 7 — 10 көн ҡапҡас, келтәләр кәбәнгә эйелә. Был кәбәндәрҙең киңлеге 2 — 3 һәм бейеклеге 4 — 5 метр булырға тейеш. Өйгәс ҡыҙып боҙолмаһын өсөн кәбән эсенә тығы арҡыры кәртәләр ҡуйып, бағаналар менән ныҡытыла. Өйгәндән һуң кәбәндәрҙең башы һалам менән, һыу үтмәҫлек итеп ябыла.

Ҡыш көндәрендә был аҙыҡтарҙы малдарға ашатыу алдынан 2 — 3 сантиметр оҙонлоғонда ваҡлап, ҡайнар һыуҙа парлана. Кәзә, һарыҡ һәм йорт ҡуяндары шул килгә лә бик яратып ашайҙар.

Агроном. Ә. Әхтәмов.

«Ҡыҙыл Башҡортостан» материалдары буйынса

„Малсылыҡты үҫтереү өсөн көрәшмәйҙәр"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 97-се номерында Салауат районының ҡайһы бер колхоздарында общественный малсылыҡты үҫтереүгә, продуктивлығын күтәреүгә тейешле иғтибар бирелмәү тураһында хәбәр баҫылғайны. ВКП(б)-ның Салауат район комитеты редакцияға белдереүенсә, хәбәрҙә күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм общественный малсылыҡты үҫтереүҙе ес йыллыҡ планын үтәүҙе тәьмин итеү буйынса практик саралар билдәләнгән.

Общественный малдарҙы юғалыуына юл ҡуйғанлыҡтары өсөн «Тудов» колхозының ферма мөдире Садриев эштән алынған, «Әй» колхозының әлекке председателе Ҡаҙиев судҡа бирелгән. Бер үк ваҡытта был айҙала ферма мөдирҙәре эшләп булып, был колхоздарҙа ҡулланылған мәсьәләһе тураһында ла күрһәтмә бирелгән. Район бетенсә ферма мөдирҙәре семинарҙары уҙғарылған.

„Белоҡатайҙа агротехниканы тупаҫ боҙалар"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 89-сы номерында Белоҡатай районының айырым колхоздары баҫыу эштәрен башҡарыуҙа агротехниканы тупаҫ боҙоуға юл ҡуйыуҙары тураһында хәбәр баҫылғайны.

ВКП(б)-ның Белоҡатай район комитетенең редакцияға хәбәр итеүенсә, был хәбәр район комитетенең бюро ултырышында тикшерелгән һәм эш менән насар етәкселек иткәне өсөн район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Гребневҡа ныҡлы иҫкәртеү яһалған. Бер үк ваҡытта баҫыу эштәрен башҡарыуҙа агротехниканы боҙоуға артабан юл ҡуймау буйынса конкрет саралар билдәләнгән.

ЯҢЫ КИТАПТАР ҺӘМ ЖУРНАЛДАР

Башгосиздат ошо көндәрҙә балалар өсөн башҡорт телендә бер нисә серия китап баҫтырып сығарҙы.

Ғариф Ғүмәр — «Йомаҡтар». Китап йәнлектәр, хайуандар, йорт ҡоштары, һыу һәм баҫыу йәнлектәре тураһындағы йомаҡтарҙан тора. Унда бөтәһе 30 йомаҡ һәм 33 һүрәт урынлаштырылған. Тиражы 5000 дана, хаҡы 1 һум 50 тин.

М. Ю. Лермонтов — «Бородино». Бында француз ғәскәрҙәренең Мәскәүгә һөжүм итеүҙәре һәм Бородино эргәһендә барған тарихи һуғыштарҙа рус ғәскәрҙәре тарафынан тар-мар ителеүҙәре тураһында яҙылған. Уның күләме 14 бит, тиражы 5000 дана, хаҡы 50 тин.

ВКП(б) Өлкә Комитеты пропаганда һәм агитация бүлегенең «Пропагандиска ярҙамға» тигән журналының 5-се номеры. Журнал пропагандистәр һәм агитаторҙар өсөн бай ҡулланма материалдар бирә. Күләме 34 бит, хаҡы 1 һум 20 тин.

* * *

Кешеләр тураһында һөйләүе—ҡот осҡос һәм әрнеткес бер нәмә.

«Һауа юлы»ның вагоны, олап һәм йөкрәп, тар урамдағы йорттарҙың стеналары араһында, бөтәһе лә бер төҫлә итеп тимер балкон һәм баҫҡыстар рәшәткәһе менән уралған өсөнсө ҡаттар бейеклегендә үткәрелгән рельстәр буйлап саба. Тәҙрәләр асыҡ һәм һәр бер тәҙрәлә тиерлек кеше күренә. Береүҙәр эшләй, нәмәләр тегә, йәки башын конторка өҫтөнә эйеп, иҫәп-хисап менән шөғөлләнә, икенсе береүҙәр, тик кенә тәҙрә янында ултыра йәки күкрәге менән тәҙрә төбөнә ятып, минут һайын үтеп торған вагондарға ҡарай. Ҡарттар ҙа, йәштәр ҙә, балалар ҙа — бөтәһе лә бер төҫлә үк тын, бөтәһе лә бер төҫлә үк тыныс. Улар аҡа шул теләкһеҙ ынтылыштарға күнегәтләнгәндәр, шунда ниндәйҙер теләк бар тип уйларға өйрәнгәндәр. Уларҙың күҙендә—тимер хакимлегенә ҡаршы нәфрәт юҡ, уның тантанаһына нәфрәт юҡ. Вагондар үткән һайын йорт стеналары дерелдәй,—ҡатын-ҡыҙҙарҙың күкрәктәре, ирҙәрҙең баштары һелкенеп ҡуя; балкон рәшәткәләрендә балалар аунай, улар ҙа ҡалтыранып ҡуялар. Улар ошо ерәнгестәрҙе тормошто, ул шулай булырға тейеш, тип, ҡотолғоһоҙ тип, ҡабул итергә күнегәтләнгәндәр. Туҡтауһыҙ дерелдәп торған мейеләрҙә, күрәһең, фекерҙең ҡыйыу һәм матур селтәрҙәр үреүе мөмкин түгелдер, йәәле һәм ҡурҡыуһыҙ хыял тыуҙырыуы мөмкин түгелдер.

Бына иҙеүе сиселгән шаҙшы кофталы бер ҡарсыҡтың ҡараңғы тонос йөҙө салынып китте. Ғазапланған һәм ағыулапған һауа, вагондарға юл бирел, ҡурҡып, тәҙрәләргә ташланды, — ҡарсыҡтың башындағы сал сәс, һөрө ҡоштоң ҡанаттары һымаҡ, елпенеп ҡуйҙы. Ҡарсыҡ үҙенең нурһыҙ, ҡурғаш һымаҡ күҙҙәрен йомдо. Юҡ булды.

Бүлмәләрҙең тонос эстәрендә иҫке-моҫко менән ҡапланған карауат тимерҙәре, шаҡшы һауыт-һаба һәм өҫтәл өҫтөндә ашамлыҡ ҡалдыҡтары күренә. Тәҙрә тәпкәрендә сәскәләр күргә килә, ҡулына китап тотҡан кешене эҙләйһең. Стеналар, иретелгән кеүек, күҙ алдынан ағылып торалар, улар бысраҡ ташҡын булып ҡаршыға ағалар, шул ташҡындың ҡыҙыу ағымында һүҙһеҙ кешеләр михнәтле ҡайнаша.

Саң баҫҡан быяла артында, тонос булып, бер пеләш баш ялтырап күренеп китте. Ул ниндәйҙер станок өҫтөндә бер үк төҫлә һелкенгеләп тора. Ерән сәсле, нәҙек кәүҙәле бер ҡыҙ тәҙрә төбөндә ултыра һәм, ҡара күҙҙәре менән әлмәктәрен һанап, ойоҡ бәйләй. Һауа килтереп бәрҙе лә, уны бүлмә эсенә табан сайҡалдырҙы, — ул эшенән күҙен алманы, ел туҙғытҡан күлдәген рәтләмәне. Биш йәшендәге ике малай балконда йомоҫҡаларҙан өй яһай. Стеналар дерелдәп китте һәм «өй» емерелде. Балкон рәшәткәһе аркыры йоҡа йомоҫҡалар урамға төшмәһен өсөн балалар уларға кескәй ҡулдары менән тотоналар, — улар ҙа эшкә ҡамасаулыҡ иткән сәбәпкә ҡарамайҙар. Тәҙрәләрҙән тағы, тағы бер-бер артлы кешеләр күренеп ҡала. әйтерһең дә, улар — ниндәйҙер бер генә әйберҙең, үҙе ҙур булып та, саңлай ваҡ өлөштәргә тотҡоланған һәм ҡом бөртөктәренә әүерелдергән бер генә әйберҙең ҡыйпылсыҡтары.

Вагондарҙың ҡоторонҡо ағымы менән ҡығыҙылып торған һауа кешеләрҙең кейемен һәм сәстәрен туҙғыта, йылы һәм бөркәү тулҡын булып уларҙың битенә килтереп бәрә, уларҙың ҡолаҡтарына меңләрсә аулаар тултыра, күҙҙәренә ваҡ һәм асы саң килтереп бәрә, һуҡырайта, әрләкһеҙ олап торған һуҙымҡы тауыш менән һаңғырауландыра...

Тәрә кешегә, фекер йөрөтөүсе, үҙенең мейеһендә хыялдар, образдар, картиналар барлыҡҡа килтереүсе, теләктәр тыуҙырыусы, моңланыусы, теләүсе, кире ҡағыусы, нәмәләр көтөүсе тере кешегә, — был, ҡырағай олау, сыйылдау, үкереү, стена таштарының шулай дерелдәүе, тәҙрә быялаларының ҡурҡаҡ сыңлауы — былар бөтәһе лә уға ҡамасаулыҡ итер ине. Асыуланып, ул өйөнән килеп сығыр ине лә, ошо ҡәбәхәт нәмәне — «һауа юлы»н ватып ташлар ине; тимерҙе шашып олауынан туҡтатыр ине, ул—тормоштоң хужаһы, тормош — уның өсөн, һәм уның тормошона ҡамасаулыҡ итеүсе нәмәләрҙең бөтәһе лә юҡ ителергә тейеш.

Һары шайтан ҡалаһы өйҙәрендәге кешеләр кешене үлтерә торған нәмәләрҙең барыһына ла тыныс ҡына түҙеп торалар.

* * *

Түбәндә, «һауа юлы»ның тимер селтәре аҫтында, урам туҙаны һәм бысраҡ эсендә балалар уйнай. Улар шауламай ғына уйнайҙар, дөрөҫ, улар бөтә донъялағы балалар төҫлө үк көләләр һәм ҡысҡыралар, ләкин уларҙың тауыштары, диңгеҙгә тамған ямғыр тамсыһы кеүек, баш өҫтәрендәге күкрәү эсендә күмелеп ҡала. Улар кемдеңдер тупаҫ ҡулы менән өй тәҙрәләренән урам бысрағына ташланған сәскәләр кеүек тойолалар. Тәндәренә ҡаланың һимеҙ парҙарын һеңдереп, улар сырайҙарын юғалтҡандар, һарғайғандар, уларҙың ҡандары ағыуланған, күгәргән металдың шомло ҡыҫҡырыуы, ҡол ителгән йәшендәрҙең сытыҡ олауы уларҙың нервыларын тыныҫһыҙлай.

Был балалар таҙа, ҡыйыу, ғорур кешеләр булып үҫерҙәрме икән? — тип һорайһың үҙ-үҙеңдән. Яуапҡа — һәр яҡтан шаҡылдау, тахылдау, үҫал сыйылдау ғына ишетелә.

Вагондар Ист-Сайд янынан үтәләр. Был — ярлылар кварталы, ҡаланың компост*) соҡоро. Урамдарҙың тәрән канауҙары кешеләрҙе ҡаланың иң алыҫ мөйөштәренә ташлайҙар; унда, — тип уйлайһың күңелеңдән, — бик ҙур һәм төпһеҙ бер тишек ҡаҙан йәки кастрюль яһалғандыр,—был кешеләр бына шунда ағыла торғандарҙыр, һәм унда уларҙан алтын ҡайнаталарҙыр. Урам канауҙары, балалар менән тулып, мыж килә.

Хәйерселекте мин бик күп күрҙем, уның йәшел, ҡанһыҙ һәм һөйәксел йөҙө миңә бик яҡшы таныш. Уның күҙҙәрен, — асыҡтан мыңғырағын һәм ҡомһоҙлоҡ менән янған, хәйләкәр һәм үс алмусан йәки ҡолдарса буйһоноусан һәм бер ваҡытта ла кешенекенә оҡшамаған күҙҙәрен мин һәр ҡайҙа ла күрҙем, ләкин Ист-Сайдтағы хәйерселектең дәһшәте — мин белгәндең бөтәһенә ҡарағанда ла ҡот осҡосораҡ.

Ярма тултырылған тоҡтай, кеше менән тулған был урамдарҙа, балалар панель буйҙарындағы сүп тартмаларынан ҡомһоҙланып серек йәшелсәләр эҙләйҙәр һәм уларҙы шунда уҡ, күгәргән хәлендә, асы саң һәм төнсөүлек эсендә ашайҙар.

Әгәр ҙә серегән икмәк ҡатыһы табалар икән, ул улар араһында ҡырағай дошманлыҡ тыуҙыра; уны тиҙерәк ҡабып ебәрергә теләп, кескәй эттәрҙәй һуғышалар. Улар, аҫ күгәрсендәр кеүек, өйөр-көтөү булып урамдарҙы тултыралар; төнгө сәғәт бирҙә, икеләһәм унан да һуңыраҡ ҡалып, — улар, хәйерселектең ҡыҙғаныс микробтары, һары шайтандағы байҙарҙың ҡомһоҙлоғона ҡаршы йәнле шелтәләр шикелле, һаман да әле бысраҡ эсендә ҡарынлар.

Бысраҡ урам мөйөштәрендә ниндәйҙер мейестәр тора, уларҙа нәмәләр бешә, песка торба аша һауаға килеп сыҡҡан пар торба осондағы кескәй һыбыҙғыны һыҙғырта. Ҡолаҡты яра торған был нескә тауыш үҙенең ҡалтырауыҡлы осо менән урамдағы бөтә ауаздарҙы тишеп үтә, ул күҙ ҡамаштырғыс аҡ, һалҡын еп шикелле, осһоҙ-ҡырыйһыҙ һуҙыла, ул буғаҙды урап тартыла, баштағы фекерҙәрҙе бутай, ениндә ҡиәтерә, ҡайҙалыр ҡыуа һәм, бер секундҡа ла туҡтамаҫтан, әшәке, серек һауала дерелдәй, мыҫҡыллап көләп, ошо бысраҡ тормошҡа асыуланып ҡалтырай.

Шаҡшылыҡ — стихия, ул бөтә нәмәгә һеңгән: өй стеналарына ла, кешеләрҙең кейемдәренә лә, уларҙың тәндәренә лә, мейеләренә лә, теләктәренә лә, фекерҙәренә лә...

Был урамдарҙа — ишектәрҙең ҡараңғы уйымдары стена таштарындағы серетән яраға оҡшайҙар. Шул ишектәрҙән күҙ һалып, баҫҡыстарҙың сүпле, бысраҡ баҫмаларына ҡараһаң, унда, эсте, үләкһә эсендәге шикелле бөтә нәмә сереп, һасып бөткәндер кеүек тойола. Ә кешеләр — үләкһә ҡорттарылыр, тип уйлайһың...

Ҙур ҡара күҙле оҙон бер ҡатын ишек янында баҫып тора; ҡулына бала тотҡан, кофтаһы сиселгән, күсәләйем имсәге оҙон тоҡсай кеүек һалынып төшкән. Бала ҡысҡыра, әсәһенең зәғиф аҡ тәнен бармаҡтары менән тырнай, уға бите менән ята, иреңдәрен супылдата, бер генә минутҡа туҡтай ҙа, тағы ла ҡатыраҡ итеп яңынан ҡысҡыра башлай, әсәһенең күкрәгенә ҡулдары менән һуға, аяҡтары менән тибә. Әсә, таштан яһалған кеүек баҫып тора, уның күҙҙәре, бесәй баһлы ябалаҡтың күҙҙәре шикелле, түңәрәк. Ул, текәлеп, алдындағы ниндәйҙер бер ноҡтаға ҡараған. Уның икмәктән башҡа нәмәне күрмәүен һиҙеп тораһың. Әсә, иреңдәрен ҡыҫып, борон менән һулай, урамдың насар еҫле ҡуйы һауаһын әсә тартҡанда уның борон тишектәре дерелдәй; был ҡатын кисә ауыҙына эләккән бер-ике йотом аш тураһындағы иҫтәлек менән, ҡасан да булһа бер ашаясаҡ икмәк һыныҡы тураһындағы хыял менән йәшәй. Бала ҡысҡыра, уның кескәй, һары тәне көҙән йыйырғандай тартыла, — әсә уның ҡысҡырғанын ишетмәй, һуғыуҙарын тоймай.

Пырҡыс йөҙлө, сал сәсле, эшләпәһеҙ, оҙон буйлы һәм ябыҡ бер ҡарт, ҡыҙыл ҡабаҡлы ауырыу күҙҙәрен ҡыҫып, сүп өйөмөндә аҡрын ғына ҡаҙына, уған күмер киҫәктәре эктарып сығара. Уның янына киләләр икән, ул, тап бүре кеүек, үҙенең ҡауҙаһын килешһеҙ генә бора ла, нәмәләр әйтә.

Ап-аҡ сырайлы ябыҡ бер егет, фонарь бағанаһына һөйәлеп һөрө күҙҙәре менән урам буйына ҡарап тора һәм арата тирә беҙрә башын һелкеп ҡуя. Ул ҡулдарын тәрән итеп салбар кеҫәләренә тыҡҡан һәм шунда, көҙән йыйырғандағылай, бармаҡтарын ҡыймылдата...

Бында, был урамдарҙа кешене күрәһең, уның тауышын ишетәһең, — асыулы, тыныҫһыҙ, үсле тауыш ул. Бында кешенең үҙ йөҙө бар — аҫ, туҡмалған, һағышлы йөҙ ул. Күренеп тора, кешеләр хис итәләр, һиҙеләп тора, улар уйлайҙар. Улар бысраҡ канауҙарҙа мыж киләләр, болғансыҡ һыу ташҡынындағы сүп шикелле, бер-береһенә бәреләләр: уларҙы асыҡ әйләндереп, бөтөрөп йөрөтә, нәмә лә булһа ашарға ине, тигән кесле теләк йәнләндерә.

Ашарлыҡ нәмә көтөп, тамаҡты туйҙырыу ләззәте тураһында хыял итеп, улар ағыулы һауаны һулайҙар һәм, күңелдәрен ни тереп, иң ҡараңғы урындарында үткер фекерҙәр, хәйләле тойғолар енәйәтле теләктәр тыуа.

(Дауамы киләһе номерҙа).

*) Компост — яһалма ашлама, ташландыҡ үҫемлектәр тиреҫе.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 14 июнь. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 14 июнда Великобритания вәкиле Дэвис председателлегендә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының 70-се ултырышы булды, ул да урынбаҫарҙарҙың эшендә бер ниндәй алға китеш килтермәне.

Билдәле булыуынса, 13 июндәге ултырышта көнбайыш державаларҙың вәкилдәре Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советының тикшереүенә ҡуйырға үҙҙәренең теләмәүҙәрен аҡлау өсөн бер ниндәй ҙә яңылыҡты һәм нигеҙле нәмәне әйтә алмаһас, сығыш яһамағайнылар.

14 июндәге ултырышта улар СССР делегацияһына һорауҙар биреп башлау менән шөғөлләнделәр, СССР вәкиле Громыконың сығыштарында был һорауҙарға күп тапҡырҙар яуап бирелгәйне инде.

Мәҫәлән, Джессеп Громыконан, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне тикшереүгә көнбайыш державаларҙың министрҙәре ҡаршы килһәләр, совет министре нәмә эшләр, тигән һорауҙы бирҙе.

Быға Громыко былай тип яуап бирҙе: әгәр ҙә урынбаҫарҙар кәңәшмәһе был мәсьәләне килешелмәгән пункт сифатында көн тәртибенә индерергә ҡарар итһә, министрҙәр уның менән нәмә эшләү тураһында хәл итерҙәр. Әлбиттә, СССР вәкиле министрҙәр Советы кәңәшмәһендә был ваҡытта Совет хөкүмәтенең фекер ҡарашын белдерәсәк.

Йәнәһе совет делегацияһының позицияһында эҙмә-эҙлеклелек юҡ, тигән тәьҫир тыуҙырырға ынтылып, Джессеп, Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы үҙ тәҡдимен СССР делегацияһы ни өсөн кәңәшмәнең башында уҡ индермәне, тип һораны.

СССР вәкиле Джессептең, шулай уҡ Дэвис һәм Пародиҙең Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә буйынса совет позицияһында эҙмә-эҙлеклелек юҡ, тигән белдереүҙәренең мәғәнәһеҙлеген күрһәтте.

— Киреһенсә, — тине Громыко, — Совет хөкүмәтенең позицияһы эҙмә-эҙекле булып тора. Совет хөкүмәте Атлантик пакт төҙәлеүҙең беренсе көнөнән үк уға ҡарата үҙенең билдәле фекер ҡарашын әйтте. Фактарға нигеҙләнеп, ул был пакттың агрессив характерҙа булыуын күрһәтте, Совет делегацияһының БМО-ла Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне быдан бер нисә йыл элек ҡуйыуы тураһында хәтергә төшереп китеүҙең кәрәге булырмы икән?

Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы тәҡдимде индереү ваҡыты хаҡындағы мәсьәләгә килгәндә, тип дауам итте Громыко, тәҡдимде кәңәшмәнең башындамы йәки уның эшенең барышындамы индерергә кәрәклекте хәл итеү беҙҙән эш ине ул. Беҙ был турала [illegible]

[illegible]

эше барышында индереүҙәре айҡанлы беҙ был хөкүмәттәр адресына бер ниндәй ҙә шелтә ташламаныҡ, сөнки өс держава хөкүмәттәре үҙҙәре кәрәкле тип иҫәпләгән ваҡытта тәҡдим индерергә хаҡлылар.

— Әгәр ҙә Джессеп әфәнде совет позицияһын эҙмә-эҙлекһеҙ тип күрһәтеү өсөн бындай методтарҙы ҡулланы икән,— тип белдерҙе Громыко, — был, тик Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә буйынса совет тәҡдименә ҡаршы килеүсе АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәрендә был совет тәҡдименә ҡаршы килеү өсөн иғтибарға лайыҡлы булған бер ниндәй дәлилдәрҙең булмауы менән генә аңлатыла. Атлантик пакт һәм Американың хәрби базаларының булыуы көнбайыш державалар менән Советтар Союзы араһындағы мөнәсәбәттәрҙең насарайыуының төп сәбәбе булып тороуын иҫәпкә алып, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне өс держава хөкүмәттәре еңел генә ҡотола алмаҫтар. Шуға күрә Совет хөкүмәте был тәҡдимде ҡуйҙы ла инде. Мәсьәләнең асылы бына шунан тора, һәм Джессеп бында был төп мәсьәләнән иғтибарҙы ситкә йүнәлтергә, кәңәшмәне ниндәйҙер тыҡрыҡтарға индерергә юҡҡа ғына маташа.

Һүҙ алған Великобритания вәкиле Дэвис, Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы пунктты көн тәртибенә индерергә ҡарар ҡабул ителһә, был йәнәһе, «министрҙәрҙе уларҙы бер нәмәгә лә килтерә алмаған, бөтөнләйгә уңышһыҙ, файҙаһыҙ һөйләшеүҙәргә генә дусар итер ине», тип буш һүҙҙәр менән белдерҙе.

Дэвистең был раҫлауына яуап итеп Громыко, Совет хөкүмәте Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советы сессияһында тикшереүҙе файҙалы тип кенә иҫәпләмәй, бәлки уны һис шикһеҙ кәрәкле тип иҫәпләй, тине. Дэвистең, был мәсьәләне министрҙәрҙең тикшереүе файҙаһыҙ дискуссияға ғына килтерер ине, тигән раҫлауҙары бер ниндәй ҙә нигеҙлектәре булмаған буш һүҙҙәр булып торалар. Был мәсьәләне тикшереүҙең һөҙөмтәләрен белеү өсөн Дэвис шөғөлләнгәнсе алдан әйтергә түгел, ә тикшерергә кәрәк. Дэвис был мәсьәләне тикшереүҙең һөҙөмтәләре уны министрҙәр Советы тикшергәнгә тиклем файҙаһыҙ, тип иғлан итә һәм беҙҙең уның менән ризалашыуыбыҙҙы теләй. Ул был мәсьәләлә Джессепте һәм Пародиҙе ышандыра ала, Джессеп уны һәм Пародиҙе ышандыра ала. Пароди Джессепте һәм Дэвисте ышандыра ала. Ләкин беҙҙе Дэвис был мәсьәләлә ышандыра алмай. Беҙҙең фекер ҡарашыбыҙ икенсе.

Өс держава хөкүмәттәренең һәм беҙҙең кәңәшмәләге уларҙың вәкилдәренең кәңәшмәне сикһеҙ һуҙыу тактикаһын ҡулла[illegible]

Берлиндағы Совет Контроль комиссияһының вәкиле С. А. Деньгиндең Берлиндең Америка секторы комендантына хаты

БЕРЛИН, 15 июнь. (ТАСС). [illegible]

Мәҫәлән, 1951 йылдың 2 июнендә Груневальд — Николасзее тимер юлы участкаһында сигнал биреү һәм связьдең ер аҫтындағы кабеле ҡаҙып сығарылған [illegible]

[illegible]

С. А. Деньгин протест белдерҙе һәм шулай уҡ Германия Демократик Республикаһы тимер юл полицияһының законһыҙ ареска алынған хеҙмәткәрҙәрен кисекмәҫтән азат итеүҙе, шулай уҡ юлдың нормаль эшен өҙөүгә йүнәлтелгән енәйәтсел эште туҡтатыуҙы талап итте.

Болгарияла Горький көндәре

СОФИЯ, 14 июнь. (ТАСС). Бөйөк рус яҙыусыһы, тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн ялҡынлы көрәшсе М. Горькийҙең үлеүенә 15 йыл тулыуҙы Болгария общественносе киң билдәләргә әҙерләнә.

Бөтә илдә әҙәбиәттә социалистик реализмға нигеҙ һалыусыға арналған тантаналы йыйылыштар буласаҡ. Софияла Болгария яҙыусыларының союзы менән Болгария фәндәр академияһының А. М. Горький иҫтәлегенә арналған берлектәге ултырышы үткәрәсәк.

Болгария фәндәр академияһы эргәһендәге болгар әҙәбиәт институты М. Горькийҙең үлеүенә 15 йыл тулыу айҡанлы бөйөк яҙыусының тормошо һәм ижады тураһында бер нисә ғилми хеҙмәт баҫып сығара. Улар араһында В. Велчевтең «Горький драматургияһында гуманизм», Симеон Русакиевтең «Болгар әҙәбиәтендә Горький» тигән һәм башҡа ғилми хеҙмәттәр бар.

Болгария-Совет обществолары союзы бөйөк рус яҙыусыһының иҫтәлеген киң билдәләй. Уның бөтә бүлектәрендә лә тантаналы йыйылыштар үткәрелә, күргәҙмәләр, китап баҙарҙары ойошторола. Болгария-Совет обществолары ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа Горький иҫтәлегенә арналған әҙәби кисәләр үткәрәсәктәр.

Совет артистәренең Италиялағы ғәйәт ҙур уңышы

РИМ, 15 июнь. (ТАСС). 14 июнда Флоренцияның муниципаль театрында Флоренция музыка фестивалендә совет балете мастерҙәре — Сталин премияһы лауреаттары Галина Уланова менән Юрий Кондратовтың беренсе сығышы булды.

Совет балете Италияның башҡа ҡалаларынан һәм сит илдәрҙән Флоренцияға Уланова сәхнәһенә махсус рәүештә килгән бик күп тамашасыларҙы йәлеп итте. Уланова тураһында Италия һәм башҡа илдәрҙең матбуғаты донъялағы иң яҡшы балерина, тип яҙҙы.

Муниципаль театр халыҡ менән шығырым тулы ине. Уланова менән Кондратов концерте Флоренция музыка фестивале тарихында быға тиклем күрелмәгән уңыш ҡаҙанды, уны газеталар триумф тип атанылар.

Концерт программаһына Чайковский, Глиэр, Сен-Санстың балет әҫәрҙәренән өҙөктәр һәм Шопен, Шуман һәм Рубинштейн музыкаһына бейеүҙәр инде.

Тамашасылар балет номерҙарен овациялар менән ҡаршыланылар һәм программаның күп кенә номерҙарын ҡабатларға мәжбүр иттеләр. Концерт тамамланғас халыҡ, матбуғат вәкилдәре, фотографтар совет артистарен көтөп һәм уларҙы яңы овациялар менән оҙатып, театр бинаһы янында бик оҙаҡ торҙолар. Концертта шулай уҡ скрипкасы Баринова, виолончелист Ростропович, пианистар Вальтер һәм Зыбцев ҡатнашты.

Корея крәҫтиәндәре араһында хеҙмәт күтәрелеше

ПХЕНЬЯН, 15 июнь. (ТАСС). Корея крәҫтиәндәре дөгө сәсеүҙе уңышлы үткәрәләр. Дөгө сәсеүҙе 8 июнгә уңышлы тамамлаған Төньяҡ Пгеньян, Көньяҡ Хамген провинциялары һәм Пхеньян районы крәҫтиәндәренең өлгөһөнә эйәреп, башҡа районларҙың крәҫтиәндәре лә шулай уҡ сәсеү кампанияһын тамамлайҙар.

Тяган провинцияһының крәҫтиәндәре, ярышҡа ҡушылып, баҫыуҙарҙа иртәнән башлап төнгә тиклем эшләйҙәр.

Францияла демократик матбуғатҡа ярҙам фондына средстволар йыйнау

ПАРИЖ, 15 июнь. (ТАСС). Франция хеҙмәтсәндәре коммунистар партияһының саҡырыуына яуап итеп, демократик матбуғатҡа ярҙам фондына средстволар индереүҙе дауам итәләр. Тик 14 июнда генә 8,5 миллион франк самаһы йыйналған.

Демократик матбуғатҡа ярҙам фондына йыйналған средстволарҙың дөйөм суммаһы 100 миллион франктан артҡан инде.

Һүрәттә: грейдер Дим юлын ремонтлау эшендә. М. Әхмәтьянов фотоһы.

Райондарҙа һабан туйҙары һәм спартакиадалар

Ғафури районы колхоздары быйылғы яҙғы баҫыу эштәрен юғары агротехник кимәлдә, ҡыҫҡа сроктарҙа тамамланылар. Был эштәрҙә башҡарыуҙа әрәләтелгән «Йондоҙ» ауыл хужалығы артеле алдынғыларҙан һанала. Хәҙер бында урожай йыйнау кампанияһына әҙерлек бара.

Был мөһим кампания башланыуға тиклем колхозда һәр йыл һайын һабан туйы үткәрелә. Был байрам хәҙер традицияға әүерелгән.

Күптән түгел уҙғарылған һабан туйы ҙур күтәренкелек һәм ойошҡанлыҡ менән үтте. Бында төрлө ярыштар, халыҡ уйындары ойошторолдо. Ярышта еңеүселәрҙән көрәшсе Ф. Мөхәмәтшин, йүгерек Ә. Әхмәтьянов иптәштәр бирәр һарыҡ һәм башҡа нәмәләр менән бүләкләнделәр.

Т. Хәмзин.

* * *

Шишмә. Райондың Ҡара Яҡуп, Күҫем, Бәбиҡ һәм Абдулла ауылдарын берләштергән «Правда» колхозы тәбиғәттең иң матур һәм бай ерендә — Дим йылғаһы буйында урынлашҡан.

Ошо көндәрҙә колхоз члендәре, тәбиғәттең ошо матур урынында үҙҙәренең һабан туйы байрамын байрам иттеләр.

Был көнгө майҙан байрамса кейенгән халыҡ менән тулғайны. Һабан туйы башҡорт халҡының яратҡан төп сифаты — аттар сабыштырыу менән башланды. 5 километр дистанцияла йүгереү ярышында беренселекте В. Рәфиҡов алды. Көрәштә С. Тимерьянов еңеүсе булып сыҡты. Тоҡ кейеп йүгереүҙә Талиб, Хәсәнов финишҡа алдан килде.

А. Баязитов.

* * *

Әлшәй. Сталин исемендәге һәм «Правда» ауыл хужалығы артеле [illegible] спорт байрамы булып, унда күп [illegible] ҡатнашты.

Ярыштарҙа төрлө спорт номерҙаре [illegible] йынса сығыштар булды. Бында тамашасыларҙың иғтибарын айырыуса М. [illegible]фуллин үҙенә тартты. Ул бер [illegible] ҡом тултырылған тоҡто теше менән күтәрергә өлгәште. Бынан башҡа ҡул усы [illegible] таҡтаға ҡаҙаҡ ҡағыу, ат дағаһы [illegible] кеүек ҡыҙыҡлы номерҙар күрһәтте.

Йүгереүҙә һәм бейеклеккә һикереү [illegible] йынса М. Әхмәтьянов һәм Н. Иванов [illegible] тәштәр беренселекте алдылар. 100 [illegible]ға йөҙөү буйынса студент З. Ғәбитов [illegible] ренсе булып финишҡа килде.

Мотоцикл һәм велосипедта ярышыу[illegible]ларҙа яҡшы күрһәткестәргә өлгәште[illegible].

М. Нагаев.

* * *

Йомағужа. Ошо көндәрҙә Киров [illegible] мендәге әрәләтелгән колхозда йәйге спартакиада булып үтте.

Спартакиада колхоздың танылған [illegible] рашсеһәренең сығыштары менән башланды. Был төр спортта 12 кеше ҡатнашты. Бында еңеүсе булып иптәш М. [illegible]сәнов сыҡты.

3000 һәм 500 метр дистанцияға [illegible] реүҙәр булды.

Н. Ярышев 54 метрға граната ырғытып беренсе урынды алды. Шулай уҡ [illegible] оҙонлоҡҡа һикереүҙә Ғ. Смакаев, Н. [illegible]хинов иптәштәр ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Ярышта еңеүселәргә призлар [illegible]релде.

Р. Хәйбуллин.

Башҡорт АССР-ы прокуратураһында

Республика прокуратураһы ошо көндәрҙә «Заготзерноның» Кушнаренко пунктының яңы урожайҙы ҡабул итеүгә әҙерлек һәм төҙәлеш эштәрен тикшерҙе.

Кушнаренко иген ҡабул итеү пункты директорының вазифаһын үтәүсе В. К. Юшин һәм был пункттың прорабы Л. И. Александров яңы урожай игенен ҡабул итеү өсөн план буйынса ике склад төҙөргә һәм ул эште ошо йылдың 20 июненә тамамларға тейеш инелар.

15 июнгә төҙөлеш планы 8 процентҡа ғенә үтәлгән, йәғни фундамент кенә һалынған.

14 складты ремонтлау әле булһа башланмаған, иген киптергес ремонтланмаған, булған складтар әҙерләнмәгәндәр, складтарға килеү юлдары сыға алмаҫлыҡ хәлдә.

Юшиндең ғәйебе менән иген таҙартыу машиналары ремонтланмағандар, 6 [illegible] орлоҡ серетелгән.

Ошо йылдың 23 майында төҙөлеш урынына төҙөлеш материалдары [illegible] нән килтерелгән. Ләкин ул бик [illegible] йына һыуҙан сығарылмай тотолған [illegible] уны һаҡлау өсөн саралар күрелмәгән, һалланған ағастар һыу менән ағып [illegible] теп бөткән.

Юшин менән Александров системалы эскелек менән шөғөлләнгәндәр. «Заготзерно» пункты складын төҙөүҙе өҙгәндәр.

Республика прокуроры Юшин менән Александровты арескә алырға бойороҡ бирҙе.

Яҡын көндәрҙә эш судҡа ҡаралаһы.

БЕЛДЕРЕҮ

21 июндә, киске 7 сәғәт 30 минутта рус драма театры бинаһында (Гоголь урамы, 58-се номерлы йорт) хеҙмәтсәндәр депутаттары Өфө ҡала Советының V сессияһы йыйыла.

Ҡала Советы исполкомы.

Редактор урынбаҫары Ғ. К. ЗӘЛНӘРНӘЕВ.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 15 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ демократик республикаһы халыҡ армияһының баш командованиеһы 15 июнда, Корея Халыҡ армияһы частары [illegible]

Иран власттары вәкилдәре менән Англия—Иран нефть компанияһының администрацияһы араһында һөйләшеүҙәргә ҡарата

ТЕГЕРАН, 14 июнь. (ТАСС). «Кейһан» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Иран үҙәк власттарының вәкилдәре менән Англия — Иран нефть компанияһының (АИНК) администрацияһы араһында АИНК предприятиеләрен Иранға тапшырыу тураһында Хоррәмшәхрҙә һөйләшеүҙәр башланған.

Юлдарҙы һәм автомобиль-ылау юлдарындағы ҡоролмаларҙы һаҡлау тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының 1951 йыл 2 июнь ҡарары

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы, юл работниктарының һәм район, ҡала Советтары исполкомдарының юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы һаҡлауға яуапһыҙ ҡараштары һәм контроль булдырмауҙары арҡаһында, республика территорияһында юлдарҙы, күперҙәрҙе һәм башҡа ҡоролмаларҙы боҙоу һәм сүп-сарлау ваҡиғалары бар, тип билдәләй. Мәсетүт — Усть-Икин — Оло Оҡа юлының 5-6 километрлы участкаһын Мәсетле орлоҡсолоҡ совхозы трактористары йыл һайын һөрөп бөтәләр, Мәсетле, Шаран һәм Илеш райондарында ауыл-ара юлдарҙы систематик һөрәләр, «Башнефть» берекмәһе тракторҙары Шаран, Ҡандра, Янаул райондарындағы юлдарҙын көпләүен боҙалар. Йомағужа һәм Бөлөбәй райондарында күпер элементтарен ватыу һәм урлау ваҡиғалары булды.

1951 йылдың ҡышында Өфө—Чкалов автомобиль-ылау юлы Аллағуат — Ерган перегонында сүп-сар түгеү урынына әүерелделе. Юлдарҙы боҙоуҙа һәм сүп-сарлауҙа ғәйепле кешеләр яуаплылыҡҡа тарттырылмаһылар.

Автомобиль-ылау юлдарына һәм юл йыһаҙларына бындай государственно ҡарамауҙы бөтөрөү маҡсатында Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы ҡарар итә:

1. Юл управлениеһе һәм уның урындағы юл органдарының рөхсәтенән башҡа түбәндәгеләрҙе эшләүҙе тыйырға:

а) тырнаҡлы тәгәрмәсле тракторҙарҙың көпләгән юлдарҙан йөрөүен, тракторҙарҙың күпер аша үтеүен тәгәрмәс аҫтына таҡтанан эҫтәмә лента ҡуйыу йәки тырнаҡтарын һалдырыу шартында ғына рөхсәт итергә;

б) юлдарҙы һәм юл ситтәрен төҙәлеш йәки башҡа маҡсаттарҙа файҙаланыуҙы;

в) юл ситендәге полосаларҙың үләнен сабыуҙы һәм ерен һөрөүҙе;

г) күперҙән ауырлыҡ күтәрә алыусанлыҡ дәрәжәһенән артҡан йөктәрҙе күперҙән ташыуҙы;

д) асыҡ юл канауҙарын, резервтар һәм ултыртылған йәшел ағас полосалары аша үтеүҙе, малдар ҡыуыуҙы.

2. а) Юлдарҙа, юл ситтәрендә мал торғоҙоу, сүп-сар, ташландыҡтар һәм ҡар түгеү урыны булдырыуҙы;

б) күпер аҫтында ут яғыуҙы һәм ағас күпер өҫтөндә тәмәке тартыуҙы;

в) тыйыу билдәләре булған юл участкаларында хәрәкәтте тыйырға.

3. Күперҙән юғары урындарҙа ваҡытлы тирмәндәре һәм башҡа гидротехник ҡоролмалары булған колхоздарҙың правлениеләрен, ойошмаларҙың етәкселәрен боҙ китеү ваҡытында бөтә һыу ебәреү урындарын һәм шлюздарҙы асыҡ тоторға мәжбүр итергә. Быуаларҙы ағыҙып китеүҙән һаҡлау сараларын күрергә, тирмәндәрҙең быуаларын, кеше үтә торған урындарында һәм һыу ебәреү урындарында тулы төҙөклөктә тоторға.

4. Юл управлениеһен һәм район, ҡала Советтары исполкомдарының юл бүлектәрен, юлдарҙы, күперҙәрҙе һәм башҡа юл ҡоролмаларын һаҡлауҙы көсәйтергә мәжбүр итергә.

Бөтә боҙоуҙар тураһында шунда уҡ протокол төҙөргә, шулар буйынса ғәйеплеләрҙе административ йәки суд яуаплылығына тарттырырға.

5. ВЦИК һәм РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1931 йылдың 30 мартында раҫланған ҡарары нигеҙендә, урындағы исполкомдарҙың һәм Советтарҙың мәжбүри ҡарарҙар сығарыу һәм уларҙы боҙоусыларға административ тәртиптә иза биреү тураһында Положениеға ярашлы рәүештә, ошо ҡарарҙың 1 һәм 2 пункттарын боҙоуҙа ғәйеплеләр административ тәртиптә иҫкәртеү, 100 һум штраф түләү йәки бер айға тиклем мәжбүри эшкә ылыҡтырыу яуаплылығына тарттырылалар.

6. Уҫал уй менән юлдарҙы боҙоуҙа, юл йыһаҙларын урлауҙа, юл ситендә ултыртылған йәшел ағастарҙы ҡырҡыуҙа ғәйеплеләр уголовный яуаплылыҡҡа тарттырылалар.

7. Юлдарҙы һәм юл ҡоролмаларын һаҡлау, уларҙы ремонтлау һәм ҡарап тотоу өсөн беркетелгән хеҙмәтсәндәр депутаттарының ауыл Советтары исполкомдары һәм колхоз правлениеләре тарафынан тормошҡа ашырылалар.

8. Ошо ҡарарҙың үтәлешен тикшереүҙе хеҙмәтсәндәр депутаттарының район, ҡала һәм ауыл Советтарына, милиция органдарына, автоинспекцияға һәм юл органдарына йөкмәтергә.

9. Ошо ҡарар, матбуғатта баҫылып сыҡҡандан һуң 15 көн үткәс, ҡаласына һәм Башҡорт АССР-ының бөтә территорияһына тарала һәм баҫылып сыҡҡан көндән һуң ике йыл хәрәкәт итә.

10. Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының 449 номерлы 1949 йылдың 12 майындағы ҡарарын көсөн юғалтҡан, тип иҫәпләргә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы председателе И. УРАЗБАЕВ.
Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының эштәрен башҡарыусы С. КОРБАНҒОЛОВ.

„ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН", „КРАСНАЯ БАШКИРИЯ", „ҠЫҘЫЛ ТАҢ", „ЛЕНИНЕЦ", „ЛЕНИНСЕ"

газеталарына 1951 йылға подписка ҡабул итеү дауам итә.

Подписка „Союзпечать"тең ҡалаларҙағы бүлектәрендә, связь бүлектәрендә һәм агентстволарында, подписка ҡабул итеү пункттарында, шулай уҡ предприятиеләрҙә, учреждениеләрҙә, совхоздарҙа һәм колхоздарҙа подписка буйынса общественный уполномоченныйҙар тарафынан ҡабул ителә.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — ССР Союзының Ҙур театр артистары — РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы, Халыҡ-ара фестиваль лауреаты Майя Плисецкая һәм Владимир Голубин ҡатнашлығында «БАҠСА САРАЙ ФОНТАНЫ» балеты.

Кис 8 сәғәт 30 минутта башлана.

Рус драма театрында — Луначарский исемендәге баҡсала — иртән «ТОРМОШ ӨСӨН КӨРӘШ», кис «АННА КАРЕНИНА».

Иртәнге спектакль көндөҙ 12 сәғәттә, киске спектакль 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СПОРТ НАМЫҪЫ».

«Салауатта» — «ҠАҘАҠ ГОЛОТА ТУРАҺЫНДА УЙҘАР».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — көндөҙ — «ЕТЕ ҠЫЙЫУ КЕШЕ», кис «КОТОВСКИЙ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П04336 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тираж 25000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 119(8836) 1951 йыл 19 июнь шишәмбе

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

УРОЖАЙ ЙЫЙНАУҒА ТИКЛЕМ ҺӘР БЕР КОМБАЙНДЫ ЯҠШЫ СИФАТЛЫ ИТЕП РЕМОНТЛАРҒА. Ә. Хәлиуллин. — Ғафуриҙә комбайн ремонтлауҙы һуҙалар (1-се бит).

БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕНДӘ. Йылҡысылыҡ алдынғыларына государство премиялары һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советенең дипломдарын биреү (1-се бит).

АЛЕКСАНДР МАТРОСОВ ИСТӘЛЕГЕ (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ә. Бикшев. — Юғары урожай өсөн көрәш — ауыл партия ойошмаларының иғтибар үҙәгендә (2-се бит).

ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫНА ӘҘЕРЛЕК МЕНӘН КИЛЕРГӘ. Ғ. Исмаев. — [illegible] (2-се бит).

М. Горький. — Һары шайтан ҡалаһы (2-се бит).

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӨРӘ — БӨТӘ ХАЛҠ ЭШЕ. Г. Вәлиев. — Сталинсе бөйөк төҙөлөштәрҙең заказдарын үтәйбеҙ (3-сө бит).

У. Камалов. — Государствоға малсылыҡ продукттарын тапшырыуҙы көсәйтәйек! (3-сө бит).

КОММУНИЗМДЕҢ БӨЙӨК ТӨҘӘЛӨШТӘРЕ. П. Титов. — Ҡырым далаһында (3-сө бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

ОТЧЕТ-ҺАЙЛАУ ЙЫЙЫЛЫШТАРЫ ҺӘМ КОНФЕРЕНЦИЯ ҠАРАРҘАРЫН ТЕҮӘЛ ҮТӘЙЕК!

Өҫтө йылдың февраль, март һәм апрель айҙарында республикабыҙҙың партия ойошмаларының отчет-һайлау йыйылыштары, район һәм ҡала конференциялары булып үттеләр. [illegible]

[illegible]

нефть биреү өсөн көрәште көсәйтеүҙәренә килтерҙе.

ВКП(б)-ның Әлшәй райкомы, партияның район конференцияһы ҡарарҙары нигеҙендә, райондың ауыл хужалығына етәкселекте һиҙелерлек яҡшыртты. Райком партия-ойоштороу һәм партия-политик эштәр менән күберәк шөғөлләнә, һуңғы һайлауҙар ваҡытында партия эшенә яңы килгән, аҙ тәжрибәле секретарҙарға эштә күберәк ярҙам күрһәтә башланы. Хужалыҡ эштәрен партия-политик эштәр менән дөрөҫ бәйләп алып барыу, Совет һәм ауыл хужалығы органдарына тапшырылған эш өсөн талапсанлыҡты көсәйтеү — райондың хужалыҡ һәм культура төҙәлеше өлкәһендәге бурыстарҙы уңышлы үтәп барыуға өлгәшеүенә килтерҙе.

Шуны ла әйтергә кәрәк, партияның район конференциялары ҡарарҙарынан үҙ эштәренә тейешле һығымта яһамаған райкомдар ҙа бар әле. Әлшәй коммунистәре партияның район конференцияһында райкомдан тәүге ойошмаларға етәкселекте яҡшыртыуҙы, райком работниктәренең урындарҙа күберәк булыуҙарын, колхоздарға һәм башҡа хужалыҡ ойошмаларына партияның тәүге ойошмаларын уғап үтеп түгел, ә улар аша етәкселек итеүҙе, быныц өсөн партия-ойоштороу һәм партия-политик эштәрҙе көсәйтеүҙе талап иткәйнеләр. Ләкин Әлшәй райкомы район конференцияһынан һуң да иҫкесә эшләүҙе дауам иттерә. Район алдында торған хужалыҡ һәм культура төҙәлеше бурыстарын үтәүгә киң массаны мобилизовать итеүҙә партияның тәүге ойошмаларына таянып эшләү, уларҙың боевой һәләтлектәрен күтәреү буйынса тейешле сара күрелмәй. Бындай факттарҙы Бөзәяз һәм Шаран райкомдарының эш практикаһында ла бик күп осратырға мөмкин.

ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитетенең һуңғы пленумы «Республикабыҙҙың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерлек һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары» мәсьәләһен тикшереп ауыл партия ойошмалары алдында торған мөһим бурыстарҙы билдәләне. Пленум көн тәртибенең икенсе мәсьәләһе итеп «ВКП(б) Черниковск ҡала комитетенең эше тураһындағы мәсьәләне тикшерҙе. Был мәсьәлә буйынса ҡабул ителгән ҡарар промышленность предприятиеләрендәге партия ойошмалары өсөн боевой программа булып тора.

Партия конференциялары һәм отчет-һайлау йыйылыштары ҡарарҙарының үтәлешен тикшереү һәм ул ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу эше Өлкә Комитет пленумы тарафынан ҡуйылған бурыстар менән тығыҙ бәйләп алып барылырға тейеш. Район һәм колхоз, МТС һәм совхоз, транспорт һәм промышленность предприятиеләре алдында торған хужалыҡ һәм культура төҙәлеше бурыстарын уңышлы үтәү, бөтәһенән элек, партия ойошмаларының масса араһындағы политик эштәренең кимәленә бәйләнгән. Шуға күрә массалар араһында эшләүгә, уларға партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарын ҙур түҙемлек менән аңлатыуға, производство пландарын арттырып үтәү, социалистик баҫыуҙарҙан юғары урожай алыу, малсылыҡты үҫтереү планын арттырып үтәү һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү өсөн социалистик ярыш ойоштороуға партия ойошмаларының төп иғтибары йүнәлтелергә тейеш.

Хужалыҡ һәм культура төҙәлеше өлкәһендә алда торған бөйөк бурыстарҙың уңышлы хәл ителеүе — хеҙмәтсәндәрҙең аңлылығына, уларҙың ижади активлектәренә һәм инициативаһына бәйләнгән. Шуға күрә предприятиеларҙа, колхоздарҙа, МТС һәм совхоздарҙа етәксе работниктәрҙең политик докладтар менән әленән-әле сығыш яһауҙары, агитаторҙарҙың йөкмәткеле беседалар үткәреүҙәре, уҡыу өйҙәре, клуб һәм библиотекаларҙың эштәрен активлаштырыу айырыуса әһәмиәт ҡаҙана.

Партия ойошмаларынан, конференция һәм отчет-һайлау йыйылыштарының ҡарарҙары менән ҡуйылған бурыстарҙы уңышлы үтәү өсөн, үҙҙәренең партия-ойоштороу һәм партия-политик эштәрен тағы ла юғарыраҡ күтәреүҙе тәьмин итеүҙәре талап ителә.

Яҡшы сифатлы силос һалынды

[illegible] эшен тамамлау өсөн көрәшә. Хәҙер 100 гектарҙың үләне сабылды.

«Правда», Андреев исемендәге колхоздарҙа бесән сабыу ойошторолоу менән бергә, силос һалыу эштәре лә йәйелдерелде. Уларҙа яҡшы сифатлы 10-ар тонна силос һалынды ла инде.

Урожай йыйнауға тиклем һәр бер комбайнды яҡшы сифатлы итеп ремонтларға

☆☆

Ғафуриҙә комбайн ремонтлауҙы һуҙалар

Ғафури районында урожай йыйнауға әҙерлек эштәре насар алып барыла. Был эштә Бурлы һәм Яңғыҙ ҡайын МТС-тары айырыуса артта ҡалалар.

Бурлы МТС-ында быйыл 17 комбайн ремонтланырға тейеш ине. Ләкин бында ошо көнгәсә тик 6 комбайн ғына ремонтланды. Яңғыҙ ҡайын МТС-ында ла шундай уҡ хәл. Бында комбайндарҙың әле яртыһы ла ремонтланып бөтмәгән.

Был МТС-тарҙа ремонт эше ныҡлап ойошторолмаған, һәр бер комбайнер тик үҙ машинаһын ремонтлай, эш оҙаҡҡа һуҙыла. Ремонтта хеҙмәт етештереүсәнлеге түбән. Ремонтсылар араһында социалистик ярыш ойошторолмаған, политик-массовый эш алып барылмай тиерлек. Бурлы МТС-ында ҡайһы бер комбайндарҙың хеҙерҙәре былтыр колхоздарҙың баҫыуҙарында ҡалдырылған. Улар йыйналып алынмаған. Шунлыҡтан уларҙың ҡайһы берҙәре тутыҡҡандар.

Был факттар урожай йыйнауға әҙерлектә МТС етәкселәренең яуапһыҙ ҡарауҙарын күрһәтәләр.

Райондың колхоздарында ла ауыл хужалығы машиналарын урожай йыйнауға әҙерләү эше бик аҡрын бара. Колхоздарҙа урғыстарҙың 50 проценте лә ремонтланмаған әле. Колхоздар быйыл байтаҡ яңы машиналар алдылар. Ләкин ҡайһы бер колхоздар һатып алынған был машиналарҙы алып ҡайтыу сараһын күрмәйҙәр. Мәҫәлән, «Йондоҙ» колхозы ике елтәргес, ике триер, ике сортировканы февраль айынан бирле Аҡ күл станцияһында ятҡыра.

Ғафури районында урожай йыйнауға әҙерлек эше үҙ ағышына тапшырылған.

Райондың етәксе работниктәренән, барыһынан да элек, район ауыл хужалығы бүлегенән, урожай йыйнауға әҙерлектәге кәмселектәрҙе ашығыс бөтөрөү өсөн МТС һәм колхоз етәкселәренә талапсанлыҡты арттырыуҙары талап ителә.

Ә. Хәлиуллин.

Комбайндар колхоздарға оҙатылды

Дәүләкән күргәҙмә-тәрәк [illegible]м шина-трактор станцияһының (директоры Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Павлов) механизаторҙары урожай йыйнауға өлгөлө әҙерләнделәр. Комбайндар күптән уҡ ремонтланды.

Хәҙер комбайндар колхоздарға оҙатылалар. Сталин исемендәге колхозға 4 комбайн ебәрелде. «Новый быт» колхозына үҙе йөрөй торған 3 комбайн һәм 2 «Сталинец—6» комбайны килтерелде лә инде.

Комбайнерҙарҙан Платонов, Әюпов, Мурыгин һәм башҡа иптәштәр юғары йөкләмәләр алдылар. Үҙе йөрөй торған комбайнды йөрөтөүсе иптәш Әхмәтуллин былтыр 420 гектар майҙандың урожайын йыйнағайны. Ул быйыл 500 гектар урожайҙың ашлығын йыйнарға йөкләмә алды.

Эш темпы түбән

Нуриман МТС-ында комбайндарҙы ремонтлауҙа бөтәһе 6 бригада эшләй. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаты иптәш Сәйфулла Шәйдуллин етәкселек иткән ремонт бригадаһы ярышта алда бара. Ремонтсы комбайнерҙарҙан Кәшфи һәм Фәткулла Миңнәжовтар, Тимер Фазлиев иптәштәр хеҙмәт өлгөләре күрһәттеләр. Иптәш Ғәләм Бәҙретдинов етәкселек иткән бригада 9 комбайн моторын ремонтланы.

Ләкин ремонтсы бригадаларҙың бөтәһе лә яҡшы эшләмәй әле. Ремонтсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһы насар. Мәҫәлән, иптәш Фәрит Бәҙретдинов, үҙе бригадир булыуға ҡарамаҫтан, дисциплинаны боҙоп, берәр аҙна эшкә килмәй йөрөнө. Шулай уҡ комбайнер Тимер Ғиниуллин дә һуңлап ҡына эшкә башланы.

МТС дирекцияһы был етешһеҙлектәргә килешеп ҡарай. Ремонт эшселәре, комбайнерҙәр араһында хеҙмәт дисциплинаһы бик йомшаҡ. Шул арҡала МТС-та ошо көнгә тиклем ни бары 7 генә комбайн ремонтланды. МТС-та шулай уҡ запас частәр табыу сараһы күрелмәй.

Быйыл МТС-та 36 комбайнер ярҙамсыһы әҙерләнергә тейеш ине. Ә хәҙерге көндә ни бары 11 кеше генә уҡый. Ҡайһы бер колхоз етәкселәре механизатор кадрҙары әҙерләү эшенә һалҡын ҡарайҙар. «Ҡыҙыл баҫыу» һәм Булганин исемендәге колхоздар әле буҡһа курсҡа бер генә кеше лә ебәргәндәре юҡ.

Х. Ямаев.

Тәтешле МТС-ы заданиеләрҙе өҙә

Тәтешле районының игенселәре быйыл бөртөклө ашлыҡ культураларының бөтә майҙанының һәр гектарынан уртаса 15-әр центнер урожай үҫтерергә социалистик йөкләмә алдылар. Хәҙер колхозсылар алған йөкләмәләрен үтәү өсөн намыҫ менән көрәшәләр. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләйҙәр, ҡый үләндәренән таҙарталар. Урожай йыйнауға ауыл хужалығы машиналарын әҙерләйҙәр.

Ләкин Тәтешле МТС-ының етәкселәре комбайндарҙы урожай йыйнауға әҙерләүгә тейешле баһа биреп еткермәйҙәр. Ремонтланырға тейеш булған 22 комбайндың ни бары 7-әүе генә ремонтланыуы быны бик асыҡ күрһәтә.

Ремонтта 40 кеше ҡатнашырға тейеш булһа ла, ни бары 31 комбайнер эшләй. Күп кенә комбайнерҙар, быйыл механизаторҙар курсын тамамлап ҡайтҡан йәш кадрҙар, был эшкә йәлеп ителмәгәндәр. Ремонтсыларҙың хеҙмәт етештереүсәнлектәре түбән. Улар араһында политик-массовый эш тейешенсә ойошторолмаған. Көндәлек норманың үтәлеше эшселәргә аңлатып барылмай. Ә директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Драницены был эш ҡыҙыҡһындырмай ҙа.

МТС директоры иптәш Солтанов комбайндарҙы ремонтлауҙың аҡрын темп менән барыуын, запас частәр һәм таҡталар етешле булмауҙан, тип аңлатмаҡсы була. Дөрөҫ, ремонт өсөн бер ни тиклем запас частәр етешмәй. Ләкин был ғына эштең ғәфү итмәҫлек насар барыуына сәбәп була алмай. Сөнки етешмәгән частәрҙе МТС етәкселәре табырға, ә мөмкин булғанда механизаторҙар ҡайһы бер иҫке частәрҙе реставрация үткәреү юлы менән яңыртырға бурыслылар. Быға өлкәлә инициатива ғына кәрәк. Ә МТС етәкселәрендә бындай сифат һиҙелмәй. Әгәр ҙә инициатива булһа, МТС-тың таҡта яра торған рамаһында етерлек тиклем таҡтаны алдан әҙерләп ҡуйырға мөмкин ине.

МТС етәкселәренең эштә һалҡынлыҡ күрһәтеүҙәрен ВКП(б) райкомы ла һәм район Советы исполкомы ла бик яҡшы беләләр. Ләкин был кәмселектәр менән килешеп ҡарайҙар.

Тәтешле МТС-ында комбайндарҙы ремонтлау темпын киҫкен күтәреү район ойошмаларының мөһим бурысы.

Х. Сафин.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Трактор менән бесән сабыла

Саҡмағош. (Телефон аша). Райондың колхоздарында мал аҙыҡтары әҙерләү эше массовый төҫ алды. Роза Люксембург исемендәге колхоздың членарҙы был эштә айырыуса ойошҡанлыҡ күрһәтәләр. Киң болондарҙа трактор кәсә менән ике бесән сапҡыс йөрөтелә. Бында хәҙер 100 гектарҙан артыҡ болондоң бесәне сабылды.

«II Коммуна» колхозында ҡул салғылары менән 50 кеше бесән саба. Колхозда силос һалыу һәм япраҡ аҙыҡтар әҙерләү эше лә яҡшы ойошторолған.

Х. Ғәлимов.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советендә

Йылҡысылыҡ алдынғыларына государство премиялары һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советенең дипломдарын биреү

Ошо көндәрҙә Башҡорт АССР-ының Министрҙәр Советы республика колхоздарында йылҡысылыҡты үҫтереүҙең 1950 йылғы йомғаҡтарын ҡараны һәм был эштә яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкән колхоз председателдәренә, йылҡысылыҡ фермалары мөдирҙәренә, йылҡысыларға, табунщиктарға, йылҡысылыҡ зоотехниктәренә Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советенең дипломдарын һәм государство премияларын бирҙе.

Республиканың йылҡысылыҡ алдынғыларынан 44 кеше дипломдар һәм 1000-әр һум суммаһында аҡсалата премиялар, 7 кеше дипломдар һәм 500-әр һум суммаһында аҡсалата премиялар алдылар.

Дипломдар һәм 1000-әр һум суммаһында аҡсалата премиялар түбәндәге иптәштәргә: Бәләбәй районынан — Поскребышев исемендәге колхоз председателе **И. Д. Трофимов**, «18 Октябрь» колхозы председателе **К. М. Власов**, Матросов исемендәге колхоз председателе **П. М. Горохов**; Балтач районынан — Куйбышев исемендәге колхоздың аттар паркы мөдире **Ф. Ғ. Ғәлләмов**, «Яҡты I» колхозы председателе **Ф. С. Сабиров**; Шаран районынан — «Беренсе Май» колхозы председателе **С. Г. Ғәлләмшин**, Карл Маркс исемендәге колхоз председателе **Х. Ә. Мөхәмәҙиева**, Шаран район ауыл хужалығы бүлегенең йылҡысылыҡ буйынса зоотехнигы **Н. А. Игнатьев**, «Сәп» колхозы йылҡысыһы **Т. Фәтхетдинов**; Зианчура районынан — «Красный партизан» колхозы председателе **И. Шестопалов**, «Новый путь» колхозы председателе **Н. Бояркин**, «Новая жизнь» колхозы председателе **М. Клюшин**, Буденный исемендәге колхоздың йылҡысыһы **С. Маликов**; Октябрьский ҡалаһы территорияһындағы— «Марат» колхозы председателе **И. Ә. Әһлиуллин**; Тәтешле районынан — «Искра» колхозы председателе **Д. А. Беляев**, Чапаев исемендәге колхоз председателе **И. Й. Йосопов**, Ленин исемендәге колхоздың өлкән йылҡысыһы **М. Ф. Фәрхетдинов**; Яңауыл районынан — Молотов исемендәге колхоздың йылҡысылыҡ буйынса мөдире **К. М. Миндияров**, Сталин исемендәге колхоз председателе **М. З. Зарипов**; Мәсетле районынан — «Серп и молот» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдире **А. Л. Жильцов**, «Искра» колхозы председателе **Я. Һ. Һадиуллин**; Шишмә районынан — «10 лет Башкирии» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдире **Т. Яхин**; Йәрмәкәй районынан — «Оборона» колхозы председателе **Я. В. Вязин**, Пугачев исемендәге колхоз председателе **Н. П. Спирин**, Поскребышев исемендәге колхоздың йылҡысыһы **Х. Н. Баннев**; Илеш районынан — Карл Маркс исемендәге колхоз председателе **Л. Х. Хәйбрахманов**, «Правда» колхозының өлкән йылҡысыһы **З. А. Аҡмөхәмәтов**, Киров исемендәге колхоздың өлкән йылҡысыһы **А. Х. Хәкимөхмәтов**; Ҡыйғы районынан — «Крестьянин» колхозы председателе **А. П. Зозуленко**, Ленин исемендәге колхоздың йылҡысылыҡ фермаһы мөдире **М. Шакиров**, «Ирек» колхозы председателе **Х. М. Мурзин**; Өфө районынан— Сталин исемендәге колхоз председателе **И. В. Волочай**, «Большевик» колхозы председателе **А. И. Егоров**; Учалы районынан — «Үрнәк» колхозының өлкән табунщигы **М. Ә. Әхтәмов**; Йомағужа районынан — «Красный маяк» колхозының өлкән йылҡысыһы **А. Х. Мулько**, «Красный украинец» колхозының өлкән йылҡысыһы **Я. О. Арбузов**, Чапаев исемендәге колхоздың өлкән йылҡысыһы **П. И. Картошин**; Стәрлебаш районынан — Сталин исемендәге колхоздың йылҡысыһы **М. Н. Николаева**; Оло Теләк районынан — «Новая Заря» колхозының өлкән йылҡысыһы **Ф. И. Широков**, «Коммунар» колхозының өлкән йылҡысыһы **Л. И. Катеников**; Матрай районынан — «Новая деревня» колхозының өлкән табунщигы **В. Ф. Шевченко**; «Ҡары күл» колхозының өлкән табунщигы **Ғ. Ҡаҙаҡбаев**; Әбйәлил районынан — Сталин исемендәге колхоздың өлкән табунщигы **Н. Ф. Артемов**, «Оскон» колхозының табунщигы **И. Б. Хәсәнов** иптәштәргә бирелде.

Дипломдар һәм 500-әр һум суммаһында аҡсалата премиялар түбәндәге иптәштәргә: Стәрлебаш районынан — «Ашҡаҙар» колхозының йылҡысыһы **И. Б. Туҡтамышев**, «Мәҙәниәт» колхозының өлкән йылҡысыһы **М. Хәмидуллин**; Тәтешле районынан — Ворошилов исемендәге колхоздың йылҡысыһы **И. Ә. Әхмәдуллин**; Ҡырмыҫҡалы районынан — «Октябрь» колхозының йылҡысыһы **Ә. Ә. Мифтахов**, К. Маркс исемендәге колхоздың йылҡысыһы **Ф. В. Семенова**; Оло-Теләк районынан — «Красное знамя» колхозының өлкән йылҡысыһы **К. П. Первушина**, Папанин исемендәге колхоздың өлкән йылҡысыһы **П. И. Конопелькин** иптәштәргә бирелде.

Александр Матросов истәлеге

Подвигтең ҡабатланыуы

Тирә-яҡта бер нисә унар һәм йөҙәр километрҙарға ҡарағай һәм шыршы урманы йәйелгән. Ундағы вароншалар, траншеялар һәм туҙып аткан сәнескеле тимер сымыҡтар күптән түгел был урындарҙа булып үткән ҡаты һуғыштарҙы хәтерләтәләр. Көтмәгәндә, колхоздың яҡшы аттары кескенә йылғаның яр буйына килеп етәләр. Бәк ҡыуаҡлыҡтар араһынан, ваҡыт үтеү менән, емерелеп бөткән иҫке дзот күренә. Юлсылар аттан төшөп иҙге ергә баҫалар.

— Бында — Александр Матросов һәләк булды, — тине бүркен һалып колхоз председателе иптәш Иванов.

Килгән кешеләр 16 йәшлек, комсомолец, гвардия рядовойы Александр Матросовтың бөйөк подвиге тураһында үҙ күҙҙәре менән күргән кешеләрҙең һөйләүҙәрен йотлоғоп тыңлайҙар.

Оҙаҡ ваҡыттар ястә ҡалырлыҡ Чернушки ауылы өсөн булған көрәш 1943 йылдың 23 февралендә башланып китте. Совет воиндары дошманды ҡыуып киттеләр. Һәм еңеү яҡын күренде. Ләкин көтмәгәндә дзот хәрәкәткә килде һәм юлды бүлде.

Дзотты алырға!

Был ауыр операцияны башҡарырға Александр Матросов китте. Ул пуля яҡмыры аҫтында өшшек ҡар өҫтөнән алға шыуышты. Дошман өҫтөнә бер нисә граната осто. Ләкин дзот атыуҙан туҡтаманы. Ошо минутта уҡ, Александр Матросов дзот өҫтөнә ташлана һәм үҙенең күкрәге менән амбразураны ҡаплай. Пулемет туҡтай. Беҙҙең воиндарыбыҙ арыҫландар һымаҡ, дошмандар өҫтөнә ташланалар.

Александр Матросовтың подвиге тураһындағы хәбәр йәшен тиҙлеге менән бөтә илгә тарала. Генералиссимус И. В. Сталин үҙенең 1943 йылдың 19 июнендәге тарихи приказында былай тип яҙҙы: **«...Александр Матросовтың бөйөк подвигы Ҡыҙыл Армияның бөтә воиндары өсөн ғәскәри батырлыҡ һәм геройлыҡ өлгәһе булып хеҙмәт итергә тейеш».**

— Гвардия рядовойы Александр Матросовтың бөйөк подвиге Совет Армияһының воиндары өсөн генә түгел, бөтә хеҙмәтсәндәр өсөн дә өлгө булып тора, — ти колхоз партия ойошмаһының секретаре иптәш Вера Иванова.

Бындағы колхозсылар Бөйөк Ватан һуғышы геройының подвигтарын үҙҙәренең көндәлек стахановсы хеҙмәттәрендә ҡабатлайҙар.

Гитлерселәр колхозсыларҙың күп йыллыҡ хеҙмәттәрен бөтөнләй юҡҡа сығарҙылар. Ауылдан бары тик бушлыҡ ер генә тороп ҡалды. Дошманды ҡыуғандан һуң колхозсылар урмандарҙан, землянкаларҙан сыҡтылар. Партизан отрядтарынан ҡайттылар һәм төҙөлөш эштәрен башлап ебәрҙеләр. 6 йыл ваҡыт эсендә колхоз хужалығы тулыһынса аяҡҡа баҫтырылды. Һәм уға Александр Матросов исеме бирелде. Малсылыҡты, игенселекте үҫтереүҙә лә колхоз крәстиәндәре яҡшы уңыштарға өлгәштеләр. Был тәңгәлдә ауылдың комсомолецтәре һәм йәштәре хәл иткес роль уйнанылар. Улар ниндәй участкаларҙа ғына эшләһәләр ҙә, үҙҙәренең хеҙмәт подвигтәре менән Александр Матросовтың батырлығын ҡабатлайҙар. Һәм уның иҙге исемен аҡлайҙар.

Үҙған йыл матросовлылар ике ауыл хужалығы артеле менән берләштеләр. Колхоздың эреләнеүе крәстиәндәргә ҙур перспектива асты. Хәҙер уның 1 мең гектарҙан артыҡ һөрөнтө ере бар. Емеш баҡсаһының майҙаны 12 гектарға арттырылды. Күлдәрҙә төрлө балыҡтар үрсетелә һәм сәсеү майҙанын, көтөүлектәрҙе киңәйтеү буйынса ҙур эштәр башҡарыла. Колхозда керамика заводы, электр станцияһы, ҙур клуб, магазин, ете йыллыҡ мәктәп бинаһы төҙәү планлаштырылды. Уларҙың ҡайһы берҙәре төҙөлә башланы ла инде.

— Былар бөтәһе лә тиҙ арала тамамланасаҡ, — ти колхоз председателе иптәш Иванов, — бының өсөн беҙҙә мөмкинлек тә, көс тә етерлек, юҡҡа ғына беҙҙе матросовлылар тип йөрөтмәйҙәр.

Б. Бунчин.

Геройҙы иҫкә алыу

СССР Верховный Советы Президиумының Указы буйынса гвардия рядовойы Александр Матросовҡа үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелгәнгә бөгөн 8 йыл тулды. Ошо айҡанлы ҡаланың предприятиеларында һәм культура-ағартыу учреждениеларында лекциялар һәм беседалар уҙғарылды.

Бөгөн көндөҙ А. Матросов исемендәге культура һәм ял паркында урынлаштырылған геройҙың һәйкәле эргәһендә пионерҙар линейкаһы уҙғарыла. Унан һуң «Иҙел» кинотеатрында уҡыусы балалар өсөн «Александр Матросов» тигән кинокартина күрһәтеләсәк. Кис менән асыҡ эстрадала Матросов тураһында лекция буласаҡ. Шулай уҡ А. Матросов исемендәге балалар кинотеатрында ла уҡыусылар өсөн герой тураһында беседалар ойошторола.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Юғары урожай өсөн көрәш—ауыл партия ойошмаларының иғтибар үҙәгенә

Тыуған илебеҙҙең халыҡ хужалығы [illegible] яңынан-яңы күтәрелешкә бара. Тыныс ижади хеҙмәт менән рухланған совет халҡы «Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә, хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә бөйөк бурыстарҙы уңышлы үтәй. [illegible]

Республикабыҙҙың Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла районындағы колхоз, МТС һәм совхоз партия ойошмалары [illegible] Баймаҡ районында бөтә сәсеү осоронда 541 коммунист, 317 комсомолец туранан-тура баҫыуҙа эшләне. Баҫыу станларында, трактор бригадаларында партия ойошмаларының 348 агитаторы массовый-политик эш алып барҙы. Был коммунистәр һәм комсомолецтәр үҙҙәренең алдынғы эш өлгөләре менән колхозсыларҙы фиҙакәр хеҙмәткә дәртләндерҙеләр. Һөҙөмтәлә был район яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа агротехник сроктарҙа тамамланы.

Ләкин ҡайһы бер районлар(ҙа) колхоз партия ойошмалары [illegible] уларҙың яуаплылыҡтарын арттырырға кәрәк. Партия группаларының эшен тейешле бейеклеккә күтәреү, колхоз партия ойошмаһына баҫыусылыҡ бригадаларын партия йоғонтоһо менән тулыраҡ солғап алырға мөмкинлек бирәсәк.

Сәселгән ашлыҡтарҙы ҡый үләндәре- [illegible] алып барырға кәрәк. Бының өсөн МТС, совхоз һәм колхоз партия ойошмаларының урып-йыйыу машиналарын, инвентарҙарҙы, келәттәрҙе хәҙерҙән үк, юғары сифатлы итеп ремонтлап ҡуйыу эшен үҙ контролдәренә алыуҙары талап ителә.

Ә. Бикишев.

Йомғаҡлау занятиеләре уңышлы бара

Коммунистарҙың марксистик-ленинсе белемен артабан күтәреүҙә ВКП(б)-ның Баймаҡ район комитеты һәм партияның тәүге ойошмалары байтаҡ эштәр башҡарҙылар. Үткән йылдарға ҡарағанда, быйыл партия мәғарифе селтәрә яҡшы комплектовать ителде. Түңәрәктәрҙә һәм политик мәктәптәрҙә уҡыуҙар үҙ ваҡытында ойошҡан рәүештә башланды. Пропагандистарҙың составы яҡшырып, уҡыуҙар юғары сифатлы үткәрелде.

Хәҙер районда йомғаҡлау занятиеләре бара. Йомғаҡлау занятиеләре башланыу алдынан тәүге партия ойошмаһы секретарҙарының семинары үткәрелде. Улар алдына партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын уңышлы тамамлау буйынса конкрет бурыстар ҡуйылды.

Йомғаҡлау беседалары алдынан бөтә түңәрәктәрҙә, политик мәктәптәрҙә консультациялар үткәрелде һәм үтелгән материалдар ҡабатлап ҡабатланылып, нығытылдылар.

Хәҙер 40 политик мәктәп, ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү буйынса 75 түңәрәк, шуның эсендә юғары типтағы 19 түңәрәк, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 15 түңәрәк, киске район партия мәктәбе һәм марксизм-ленинизм теорияһын үҙ аллына өйрәнеүселәрҙән 208 кеше йомғаҡлау занятиеләрендә ҡатнашалар.

Райондағы бөтә түңәрәк һәм политик мәктәптәрҙең 50 процентында йомғаҡлау занятиеләре үткәрелде лә инде.

ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса юғарылатылған типтағы түңәрәктең пропагандисы иптәш Ниятшин («Ҡыҙыл байраҡ» колхозы) йомғаҡлау занятиеләренә әҙерләнеү алдынан консультациялар үткәрҙе, обзор лекциялары ойошторҙо. Бындай метод йомғаҡлау занятиеләрен ҡыҙыҡлы һәм йөкмәткеле итеп үткәреүгә ҙур ярҙам итте. Түңәрәктең 17 тыңлаусыһы ла программа материалдарын тәрән үҙләштергәнлектәрен күрһәттеләр.

«Тейәләс» колхозының тәүге партия ойошмаһында ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса иптәш Самарбаев етәкселек иткән түңәрәк тә программа материалын өйрәнеүҙе тамамланы. Йомғаҡлау занятиеләренә бөтә тыңлаусылар ҙа килеп, беседала актив ҡатнаштылар. Яҡуп Дияров һәм Нажия Әшрәфуллина иптәштәр үтелгән материалдарҙы яҡшы үҙләштергәндәр.

Һәүәнәк тәҙәләш комбинаты, Башҡорт педагогия училищеһе «Һаҡмар», «Ударник», «Ирандек», «Ҡыҙыл маяҡ» колхозларының тәүге партия ойошмаларында йомғаҡлау занятиеләре бик уңышлы үтте.

В. Буранбаев,

ВКП(б)-ның Баймаҡ райкомы пропагандисе.

Агитаторҙарҙың дөйөм ҡала йыйылышы

ВКП(б)-ның Ишембай ҡала комитете агитаторҙарҙың дөйөм ҡала йыйылышын үткәрҙе. Йыйылышта ҡаланың промышленность предприятиеларында һәм учреждениеларында эшләүсе агитаторҙарҙан 400-ҙән артыҡ кеше ҡатнашты.

Улар ВКП(б) ҡала комитете секретарҙары иптәш Платоновтың «Халыҡ-ара хәл» һәм иптәш Попованың «Агитаторҙарҙың бурысы» тигән темаларға яһаған докладтарын тыңланылар.

Докладтарҙан һуң үҙәк электр станцияһының агитаторы Сбняков, бораулау конторалы агитаторы Максимов, есенсе номерлы промыселдың агитаторы Әхмәтшина һәм башҡа иптәштәр үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Б. Морзағалиев.

Завод коммунистәренең политик уҡыуҙары

Белорет. Металлургия заводының политик мәктәптәрендә, партия тарихын өйрәнеү түңәрәктәрендә йомғаҡлау занятиеләре башланды. Быйыл завод партия ойошмаһының партия мәғарифе селтәрендә 47 түңәрәк, политик мәктәп эшләп, уларҙа бөтәһе 600 кеше уҡыны. Политик мәктәптәрҙә уҡыусыларҙан 150 кеше партияһыҙ эшселәр, инженер-техниктар булдылар.

Йомғаҡлау занятиеләренең тәүге йомғаҡтары уҡыусыларҙың большевизм теорияһына эйә булыуҙа ныҡ үҫкәнлектәрен күрһәттеләр. ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса пропагандист инженер Исхаков, Михайлов, Мирошниченко иптәштәр етәкселек иткән түңәрәктәрҙә уҡыусылар айырыуса яҡшы күрһәткестәр бирәләр. Был түңәрәктәр бөтә уҡыу йылы буйынса яҡшы эшләнеләр.

Пропагандист иптәш Исхаков етәкселек иткән түңәрәктә 18 кеше уҡый. Уларҙың күбеһе — коммунистәр. Был түңәрәктә уҡыусылар үҙҙәренең политик белемдәрен күтәреүҙә есенсе йыл инде инженер Исхаков етәкселегендә эшләйҙәр. Улар бынан өс йыл элек политик мәктәп программаһы менән уҡый башлағайнылар. Улар быйыл партия тарихының тулы программаһын тамамлап сыҡтылар.

Йомғаҡлау занятиеләрендә коммунист Серегин, Чехонин, Маврин һәм партияһыҙ Бикбулатов иптәштәр большевизм теорияһына эйә булыуҙа ныҡышмалы эшләгәнлектәрен күрһәттеләр.

И. Павлов,

Белорет металлургия заводы партия ойошмаһының пропагандисе.

ЯҠШЫ ҺӨҘӨМТӘЛӘР

Быйыл беҙҙең районның политик мәктәптәрендә йомғаҡлау занятиеләре ойошҡанлыҡ менән юғары идея кимәлендә үтте. Йомғаҡлау занятиеләрендә бөтә тыңлаусылар ҙа булдылар һәм ҡуйылған һорауҙарҙы тикшереүҙә актив ҡатнаштылар.

Һүрән МТС-ы партия ойошмаһы эргәһендәге политик мәктәп тыңлаусыһы иптәш Хаванцев, «Советтар Союзы — тыныслыҡ һәм демократияның таяныҫы» тигән темаға һорауға яуап биреп, былай тине:

— Советтар Союзы «тыныслыҡ» һүҙе менән бергә барлыҡҡа килде. Хәҙерге ваҡытта ла ул тыныслыҡ политикаһын эҙмә-эҙлекле рәүештә үткәреп килә. Совет халҡы үҙенең фиҙакәр хеҙмәте менән тыныслыҡ эшен нығыта. Мин етәкселек иткән трактор бригадаһы яҙғы сәсеү ваҡытында районда беренсе урынды алды һәм 2000 килограмм яғыулыҡты экономиялап, уның иҫәбенә ике көн баҫыу эштәрен башҡарҙы. Беҙҙең бригаданың намыҫлы хеҙмәте лә тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу эшенә ҙур вклад булып тора.

Йомғаҡлау занятиеләре партияның башҡа тәүге ойошмаларында ла юғары идея кимәлендә үтте. Мәҫәлән, «Инәк» совхозының ферма мөдире иптәш Макаев «Беҙҙең маҡсат — коммунизм» темаһынан һорауҙарға тәрән йөкмәткеле яуап бирҙе.

Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһында ла йомғаҡлау занятиеләре яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе.

Ш. Сәйфетдинов,

ВКП(б)-ның Зианчура райкомы партия кабинеты мөдире.

Яңы уҡыу йылына алдан әҙерлек менән килергә

Иҫке Ҡобау мәктәбендә тәрән тыныслыҡ

Мәктәптә үткәрелгән экзамендар уҡыу йылында үтелгән дәрестәрҙе насар үҙләштергәнлеген күрһәттеләр. 10-сы класты тамамлаусы 9 уҡыусының 6-һы ғына экзаменда ҡатнашты. 3 уҡыусы рус теле һәм математика буйынса яҙма эштәрҙә насар билдәләр алғанлыҡтан, артабан экзамендарға индерелмәнеләр. Башҡа кластарҙа ла экзамендарҙың йомғаҡтары шатлыҡлы булманы. 5-се класта уҡыусы 95 уҡыусының 17-һе йә экзамендарҙа ҡатнашманы, йә насар билдәләре алдылар.

Бындай һөҙөмтә мәктәптең эше, тормошо, унда уҡытыу-тәрбиә эштәренең ҡуйылышы менән тәрән танышырға мәжбүр итә.

Иҫке Ҡобау урта мәктәбе — Иглин районында берҙән-бер башҡорт урта мәктәбе. Был мәктәпкә райондың дүрт ауыл Советынан балалар уҡырға йөрөй.

Мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эштәрен тейешле кимәлдә алып барыу өсөн кәрәк булған шарттар тыуҙырылмаған, мәктәп ни бары 6 кластан ғына тора, шуға күрә шул 6 класта ике смена менән 13 класс эшләп килгән.

Уҡыу пособиеларын етерлек тиклем әҙерләмәү сәбәпле күп кенә дәрестәр программала ҡуйылған талаптарға яуап бирерлек итеп үткәрелмәгән. Физика һәм химия фәндәре буйынса тәжрибәләр үткәреү өсөн кәрәкле приборҙар булдырылмаған, 10-сы класс уҡыусылары бөтә уҡыу йылы буйынса рус һәм башҡорт теле дәреслектәре менән тәьмин ителмәгәндәр.

Мәктәп эргәһендә интернат юҡ. Шунлыҡтан уҡыусылар Иҫке Ҡобауҙан 12 километрға тиклемге алыҫлыҡтағы ауылдарҙан йөрөп уҡырға мәжбүр булалар.

Ҡыш көндәрендә етерлек тиклем яғыулыҡ әҙерләп ҡуймау һөҙөмтәһендә, ҡыш айырым ваҡыттарҙа мәктәптең йылытылмауы һәм дәрестәрҙең өҙөлөү факттары булды.

Был әсе һабаҡтарҙың инде алдағы уҡыу йылында ҡабатланыуына юл ҡуймау өсөн хәҙер ныҡлы эш башҡарылырға тейешлеге һәр кемгә аңлайышлы. Ләкин бында бәхәсһеҙ башҡарылырға тейешле был эште йәйелдереү менән быйыл ҙа ашыҡмайҙар әле. Мәктәп эшенә ҙур зыян килтергән юғарыла һанап үтелгән шул етешһеҙлектәргә бында күнегеп киткәндәр, улар менән һаман килешеп, мәслихәт кенә йәшәүҙе иттерәләр. Унда мәктәпкә һәм инвентарҙарға ремонт әле һаман [illegible]ланмаған.

Совет государствоһы халыҡ мәғ[арифе] тураһында ғәйәт ҙур хәстәрлек [...] СССР хөкүмәте Иҫке Ҡобау ауыл[ында] урта мәктәп өсөн бина төҙөүгә ла [...]мең һум аҡса бүлде.

Мәктәп бинаһы план буйынса [...] йыл 15 октябргә төҙөлөп бөтергә [...] эксплуатацияға тапшырылырға [тейеш]. Ләкин бында государство биргән [...] мөмкинлекте файҙаланыу өсөн кәре[кле] ойоштормайылар. Төҙөләш өсөн 228 [...]бометр бүрәнә әҙерләү урынына [...] кубометр ғына әҙерләнгән, уның да [...] кубометры ғына килтерелгән.

Мөһим төҙөлөштө үҙ ваҡытында [...]шарыуға колхоздар һәм общественно[сть] ылыҡтырылмаған. Район Советы [...]комы мәктәп төҙөлөшөнең торошо ме[нән] бөтөнләй ҡыҙыҡһынмаған, төҙөлөш[кә] ҡатнашырға тейеш булған айырым кол[хоз]дарға күләм заданиеләре бирелмә[гән]. Тап бына шул эштең һуҙылыуына [...] сәбәптәрҙең береһе булып тора ла. Мә[ҫә]лән, «Путь Ленина» колхозы (пред[се]дателе иптәш Засим) 58 кубометр бүр[ә]нәнең бер генә кубометрын да килтер[ме]мәгән. «Родина», Киров һәм Самар[...] исемендәге колхоздар ҙа төҙөлөшкә [те]йешле ярҙамды күрһәтмәйҙәр.

Иҫке Ҡобау башҡорт урта мәктәбе кадрҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһе [...] насар тора. Район мәғариф бүлеге һә[м] шулай уҡ Башҡорт АССР-ының Мәғ[ариф] министерствоһы унда 17 уҡыусы[...] тик береһе генә юғары белемле булы[...] белһәләр ҙә, мәктәпте әҙерлекле уҡы[ты]тыусылар менән комплектовать итеү т[у]раһында тейешле сара күрмәйҙәр.

Республикала мәктәптәрҙе яңы уҡ[уу] йылына алдан әҙерләү буйынса соц[иа]листик ярыш байрағын күтәргән Ір[...] Тейәләс районы хеҙмәтсәндәренең ини[циа]тиваһы менән ныҡлы эш йәйелдерелә һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы ҡа[ра]ры нигеҙендә яңы уҡыу йылына ә[ҙер]лектә мәктәптәргә ярҙам итеү буйы[нса] айлыҡ та башланды. Тик Иглин рай[о]нының Иҫке Ҡобау мәктәбендә генә һа[]ман тәрән тыныслыҡ, яңы уҡыу йылы[]на әҙерлек эше рәфү ителмәҫлек рәүе[ш]тә һуҙылып килә.

Ғ. Ишмә[...]

Горигә экскурсия

Һәр йыл һайын күп меңләгән хеҙмәтсәндәр иптәш Сталиндең тыуған ҡалаһы — Горигә экскурсияға баралар.

Күптән түгел Стәрлетамаҡ тимер юлсыларынан бер группа үҙҙәренең ял ваҡыттарында Грузияға туристик экскурсияға барып, иптәш Сталиндең тыуған ҡалаһы Гориҙа булдылар. Экскурсанттар бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең тыуған һәм балалыҡ ваҡытын үткәргән йортто ҡаранылар.

Д. Егоров.

Өфөнөң тарихи урындарында

Күптән түгел Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе сессияһына килгән депутаттар Өфө ҡалаһының тарихи урындарында экскурсияла булдылар.

Экскурсияла депутаттарҙан: Яҡупова, Рогожина, Пономарева, Чуватов, Кострамина, Гусева, Ғәликәева, Таһирова, Хафизова, Даутова, Киришин, Сәғитов, Хәсәнова һәм башҡалар ҡатнаштылар.

Экскурсанттар Өфөнөң боронғо крепосының ҡалдыҡтарын айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар. Бынан тыш улар, Бөйөк даһи В. И. Ленин, большевик Ш. А. Хоҙайбирҙин, А. М. Чеверев, Башҡорт халыҡ шағиры М. Ғафури, Советтар Союзы Геройы А. М. Матросов һәм башҡа күренекле кешеләрҙең һәйкәлдәре эргәһендә булдылар.

Экскурсанттарҙан башҡа бер группа депутаттар В. И. Ленин музейында бөйөк даһиҙың Өфөләге революцион эше тураһында музейҙағы бөтә экспонаттар менән яҡындан таныштылар. М. Ғафури, крайҙы өйрәнеү һәм художество музейҙарында булдылар.

А. Блау.

МАКСИМ ГОРЬКИЙ

ҺАРЫ ШАЙТАН ҠАЛАҺЫ

(Аҙағы. Башы 118-се номерҙа).

Улар ҡаланың ашҡаҙанындағы ауырыу таратыусы микробтарға оҡшайҙар, һәм бер ваҡыт килер, хәҙер ҡала уларҙы бик йомарт рәүештә шундай ағыу менән ағыулаған булһа, улар ҙа шул уҡ ағыу менән ағыулайҙар.

Фонарь эргәһендәге егет, ас тештәрен бик ныҡ ҡыҫып, ара-тирә башын һелкеп ҡуйырылай. Мин уның нимә уйлауын, нимә теләүен аңлайым шикелле — ҡулдарының ҡот осҡос көслө булыуын, арҡаһына ҡанат үҫеүен теләй ул, минеңсә. Был шуның өсөн: бер көндө .кепә-көндөҙ ҡала өҫтөнә күтәрелергә лә, ике ҡорос рычаг батырған кеүек, ҡалаға ҡулларҙы батырырға, ҡалалағы бөтә нәмәнә күп һәм саң итеп бергә бутарға — кирбесен һәм ынйыһын, алтынын һәм ҡолдар итеп, быялаһын һәм миллионерҙарын, шаҡшыһын, идиоттарын, храмдарын, шаҡшы менән ағыуланған ағастарын һәм бына шул тинтәк, күп ҡатлы «күк ҡымергестәрҙе», бөтәһен дә, бөтә ҡаланы — бер өйөм итеп, шаҡшы менән кеше ҡанынан торған ҡамыр итеп эшәке бер хаос итеп бутарға. Зәғиф һәм ябыҡ тәндә шеш тәбиғи булған төҫлө үк, егеттең мейеһендә шундай ҡот осҡос теләктең булыуы ла тәбиғи. Ҡоллар эше күп булған ерҙә ирекле, ижади фекергә урын булыу мөмкин түгел, унда емереү идеяларының ғына, ағыулы үс гөлдәренең генә, хайуандарса шашҡын протесттең генә сәскә атыуы мөмкин. Был аңлашыла ла — кешенең йәнен боҙоусылар ул кешенән үҙҙәренә ҡарата шәфҡәт көтөргә тейеш түгел.

Кешенең үс алырға хаҡы бар — был хоҡуҡты уға кешеләр бирәләр.

Ҡором менән ҡапланған йәмһеҙ күк йөҙө ҡараңғылана. Ҙур йорттар тағы ла шыҡһыҙыраҡ, ауырыраҡ булып китәләр. Ҡайһы бер урындарҙа, уларҙың ҡараңғы эстәрендә уттар тоҡана. Уттар шул тәрбәләрҙең үле малын тәнә буйы һаҡларға тейешле сәйер януарҙарҙың һары күҙҙәре кеүек ялтырай.

Кешеләрҙең эш көнө бөттө һәм, — ул эштең ни өсөн эшләнеүе тураһында, уның үҙҙәренә кәрәклеме, түгелме икәнлеге тураһында уйламаҫтан, — ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап, йоҡларға ашығалар. Тротуарҙарҙы кеше ҡаүҙаларының тәрә ташҡыны баҫҡан. Бөтә баштар бер үк төҫлө түңәрәк эшләпә менән ҡапланған, һәм барлыҡ мейҙәр — бының күҙҙәренән белеп була — инде йоҡоға талған. Эш тамам булған, бүтән уйлайһы нәмә лә юҡ. Бөтәһе лә хужа өсөн генә уйлай, үҙен тураһында уйлар әйбер юҡ; әгәр эш булһа — икмәк тә һәм тормоштоң арзанлы ләззәттәре лә буласаҡ, ә һары шайтан ҡалаһында кешегә шунан башҡа бер нәмә лә кәрәк түгел.

Кешеләр үҙҙәренең йоҡо урындарына, үҙҙәренең ҡатындары янына, үҙҙәренең ирҙәре янына ҡайталар һәм төнлә менән, бөркөү бүлмәләрҙә, тиргә батып, ҡала эсеп яны, саф аҙыҡ тыуһын тип үбешәсәктәр...

Ҡайталар. Көләү ауаздары ла ишетелмәй, күңелле һөйләшеүҙәр ҙа юҡ, йылмайыуҙары ла күренмәй.

Автомобилдәр ухылдай, ҡамсылар сыжылдай, электрик сыбыҡтары ҡаты геүләй, вагондар шалтырай. Ҡайҙа булһа ла музыка уйнай...

Малайҙар асы тауыш менән газета исемдәрен ҡысҡыралар. Шарманканың ҡәбәхәт тауышы һәм кәмәсәләр үкереүе кеше үлтереүсе менән бәләгән мәҙәксеһенең трагикомик ҡосаҡлашыуында бергә ҡушыла. Бескәй кешеләр ихтыярһыҙ баралар, — әйтерһең дә, тау аҫтына таштар тәгәрәй...

Һары уттар һаман да, һаман да күберәк тоҡана — стеналар һыра тураһында, виски тураһында, һабын тураһында, яңы бритва тураһында, эшләпәләр, сигаралар, театрҙар тураһында ялҡынлы һүҙҙәр менән балҡый. Бөтә ерҙә урамдар буйлап Алтындың ҡомһоҙ көсө менән юғары торған тимер гөрөлтөһө һаман да баҫылмай. Хәҙер, һәр ҡайҙа уттар яныи торғанда, был әҙләкһеҙ олоу тағы ла әһәмиәтлерәккә әйләнә, ул яңы мәғәнәгә, тағы ла ауырыраҡ көскә эйә була.

Порт стеналарынан, вывескаларҙан, ресторан тәҙрәләренән эрелтелгән Алтындың һуҡырайтҡыс нуры ағыла. Күп ҡысҡырыныусы, шул оятһыҙ нур тантаналы рәүештә һәр ҡайҙа бейей, күҙҙе ҡамаштыра, үҙенең һалҡын ялтырауы менән кешеләрҙең йөҙҙәрен боҙоп күрһәтә. Уның тәйләкәр балҡыуында сикһеҙ ҡомһоҙлоҡ бар: кешеләрҙең эшләп тапҡан бөртөктәрен кеҫәләренән тартып алырға кәрәк. — ул үҙенең күҙ ҡыҫыуҙарын утлы һүҙҙәр итеп теҙкәй ҙә, бер нәмә лә дәшмәҫтән, шул һүҙҙәр менән эшселәрҙе арзанлы күңел асыуҙарға саҡыра, уларға уңайлы әйберҙәр тәҡдим итә...

Был ҡалала ут иң киткес күп. Башта был матур булып күренә һәм, тулҡынландырып, күңелде аса. Ул — ирекле стихия, ҡояштың мәғрур балаһы. Ул ярһып сәскә атҡанда — уның сәскәләре бөйөк һәм ер йөҙөндәге барлыҡ сәскәләрҙән матурыраҡ булып йәшәй. Ул ерҙе таҙарта, ул иҫкергән, үлгән һәм шаҡшы әйберҙәрҙе бөтәһен дә юҡ итә ала.

Ләкин был ҡалала утҡа күренмәле был да ситлектәргә ябылған, утҡа ҡарап торған сағында, бында — бөтә әйберҙәр шикелле — уттың да ҡол ителгәнлеген аңлайһың. Ул Алтынға хеҙмәт итә, Алтын өсөн хеҙмәт итә һәм кешеләрҙән дошмандарса алыҫ тора...

Бөтә әйберҙәр кеүек үк — тимер, таш, ағас шикелле үк — ут та кешегә ҡаршы һүҙ ҡуйышҡан. Кешеләрҙең күҙен ҡамаштырып, ул уны саҡыра:

— Бында кил! — ти

Һәм алдап аҡсаһын ала:

— Аҡсаңды бир! — ти.

Кешеләр уның саҡырған еренә баралар, үҙҙәренә кәрәкһеҙ сүп-сарҙы һатып алалар һәм үҙҙәрен миңгерәүләндерә торған тамашаларҙы ҡарайҙар.

Әйтерһең дә ҡаланың үҙәгендә, шатлығынан бик ҡаты сыйылдап, ҡот осҡос бер тиҙлек менән ҙур бер Алтын кисәге әйләнә, ул бөтә урамдарға алтын саң тарата, һәм кешеләр көнө буйы шул саңды ҡомһоҙланып эҙләйҙәр, әләктереп, тотоп алалар. Бына кис була, Алтын кисәге, һалҡын утлы өйөрмә барлыҡҡа килтереп, кире яҡҡа әйләнә башлай һәм кешеләрҙе, улар көндөҙ тотоп алған Алтын саңды кире бирһендәр өсөн, шул ут өйөрмәһенә тартып индерә. Кешеләр һәр ваҡыт үҙҙәре алғандан артығыраҡ бирәләр, һәм икенсе көндө иртә менән Алтын кисәгенең күләме ҙурая, уның әйләнеше ҡыҙыулана, Алтын ҡоло булған тимерҙең тантаналы олоуы, Алтын тарафынан ҡол ителгән бөтә көстәрҙең үкереүе тағы ла көслөрәк яңғырай.

Һәм кисәгенә ҡарағанда ла, ҡомһоҙланыбыраҡ, тағы ла ҙурыраҡ көс менән ул кешеләрҙең ҡанын һәм мейеһен һура, — кис етеүгә шул ҡан менән шул мейене һалҡын һары металға әйләндерә. Алтын кисәге ҡаланың йөрәге. Уның тибешендә — бөтә тормош, уның күләме үҫеүҙә — тормоштоң бөтә мәғәнәһе.

Бына шуның өсөн кешеләр көндәр буйы ер ҡаҙыйҙар, тимер сүкейҙәр, йорттар һалалар, фабрика төтөнөн һулайҙар, тәндәренең бөтә күҙәнәктәре менән ағыулы, ауыр һауа бысрағын һулайҙар, бына шуның өсөн улар үҙҙәренең матур тәндәрен һаталар.

Шул кәбәхәт сихырсы кешеләрҙең йәнен ойота, уларҙы һары шайтан ҡулында күндәм ҡоралға, рудаға әйләндерә, шул рудаһан ул арымай-талмай үҙенең тәне һәм ҡаны булған Алтын сығара.

Океан ялаһынан төн килә һәм ҡала өҫтөнә үҙенең һалҡынса, тоҙло һулышын өрә. Меңдәрсә уҡтар булып, уға һатҡын уттар ҡаҙала — ул килә, ҡыҙғанып, йорттарҙың ҡәбәхәтлеген, тар урамдарҙың эшәкеләгән ҡара кейемдәргә төрә, хәйерселек сәләмәләренең шаҡшыһын ҡаплай. Ҡомһоҙ аҡылһыҙлыҡтың ҡыҙағай олоуы уның ҡаршыһына бара, уның тынлығын яра — ул килә һәм, ҡол ителгән уттың оятһыҙ ялтырауын аҡрын-аҡрын һүндереп, үҙенең йомшаҡ ҡулы менән ҡаланың әренле яраларын ҡаплай.

Ләкин, урамдарға килеү менән, ҡаланың ағыулы парын еңергә, уны үҙенең саф һулышы менән таратырға уның көсө етмәй. Ул ҡояш йылытҡан стена таштарына һырына, тутыҡҡан түбә тимере буйлап, урам бысрағы буйлап шыуыша, ағыулы саң ямая еҫтәр менән бысрана һәм, ҡанаттарын һалындырып көсһөҙ, хәрәкәтһеҙ рәүештә өй түбәләренә, урам канауҙарына һуҙылып ята. Унан бары тик ҡараңғылыҡ ҡына ҡала, — уның сафлығын да, һалҡынлығын да, таш, тимер, ағас һәм кешеләрҙән бысраҡ үпкәләре йотоп, юҡҡа сығара... Унда инде тынлыҡ та юҡ, поэзия ла юҡ.

Бөркөү һауа эсендә ҡала йоҡоға тала, ул бик ҙур бер хайуан кеүек мығырҙана. Көнө буйы бик күп нәмә ашағанға, тығынғанға, уға эҫе, яйһыҙ һәм ул яман, ауыр төштәр күрә.

Бер дереүҙән ҡуя ла, үҙенең ҡыҙғаныс провокаторлыҡ хеҙмәтен, реклама лакейе хеҙмәтен тамам итеп, ут һүнә. Йорттар кешеләрҙе, береһе артынан береһен, үҙҙәренең таш ҡарһаҡтарына һуралар.

Бәкәрәһе сыҡҡан ябыҡ, оҙон буйлы бер кеше урам мөйөшөндә баҫып тора һәм, башын аҡрын ғына борғолап, ул-һулға күңелһеҙ генә ҡарай. Ҡайҙа барырға? Урамдарҙың бөтәһе лә бер төҫлө, йорттарҙың бөтәһе лә тоноҡ тәҙрәләренең күҙ ағы менән, бер үк дәрәжәлә ғәмһеҙ һәм йәнһеҙ рәүештә бер-береһенә ҡарайҙар...

Бөркәүлә һарыш, һулышты быуып, йылы ҡулы менән боғаҙҙан ҡыҫа. Өй түбәләре өҫтөндә нәләт төшкән, бәләһе ҡаланың үтәлей күренә торған кендерә парҙар болото хәрәкәтһеҙ аҫылынып тора. Шул пәрҙә арҡыры күктең ҡараңғыһыҙ бейеклегендә тоноҡ ҡына бүлгән йондоҙҙар йымылдай.

Тегә кеше шләпәһен һала, башын күтәрә, юғарыға ҡарай. Был ҡалалағы бейек йорттар, башҡа телдә генә ҡайһы ҡала менән сағыштырғанда ла, күк йөҙөнән ерҙән йыраҡҡараҡ этәргән. Йондоҙҙар — кескенә һәм яңғыҙ...

Алыҫта борсоулы рәүештә баҡыр сирена ҡысҡыра. Тегә кешенең оҙон аяҡтары сәйер генә ҡалтыранып китә һәм ул, аҡрын ғына атлап, башын эйеп, ҡулдары менән киҙәнеп, урамдарҙың береһенә юлға китә. Ваҡыт һуң инде, урамдар һаман да буш бараһаҙ(?). Бером-һәрәм кескенә кешеләр, себендәр кеүек, ҡараңғылыҡ эсендә юҡ булалар. Урам мөйөштәрендә һоро шинель кейгән, ҡулдарына таяҡ тотҡан полицейскийҙәр хәрәкәтһеҙ баҫып торалар. Улар, ауыҙҙарын аҡрын ҡыбырлатып, тәмәке сәйнәйҙәр.

Тегә кеше улар тураһынан, телефон бағаналары тураһынан, өйҙәрҙең стеналарындағы бик күп ҡара ишектәр тураһынан, — дүрткел ҙур ауыҙҙарын йоҡо һорап асҡан ҡара ишектәр тураһынан уҙа. Ҡайҙалыр алыҫта трамвай вагоны олой һәм үкрәй. Урамдарҙың күгәлйем ситлегендә төндәң һулышы быуыла, [...] үлә.

Тегә кеше, аяҡтарын тигеҙ атлап, [...] гәлгән оҙон кәүҙәһен сайҡап, һаман [...]ра. Уның фигураһында ниндәйҙер уйсан[...]лыҡ бар, ҡыйыулығы булмаһа ла, [...] итеүсе уйсанлыҡ...

Минеңсә, ул — ҡараҡ булһа кәрә[к].

Ҡаланың ҡара йөтмәһендә үҙен йәнле итеп һиҙеүсе кешене күреүе күңелле.

Асыҡ тәҙрәләрҙән күңел болғатҡыс [...] еҫе аңҡый.

Бөркәү һәм һарышлы ҡараңғылыҡ йоҡомһораған, аңлайышһыҙ, һаңғырау ауаздар ишетелә.

Күңелһеҙ һары шайтан ҡалаһы йоҡоға тала һәм йоҡоһонда һаташа.

1906.

Коммунизм төҙөлөштәре—бөтә халк эше

Коммунизм төҙөлөштәренә

Ағиҙел йылға пароходствоһының суднолар коллективы социалистик ярышты киң йәйелдереп, меңәрләгән тонна төрлө йөктәрҙе ташыуҙа өлгөлө эшләй. Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре өсөн билдәләнгән йөктәрҙе үҙ ваҡытында илтеп еткереү өсөн ул бөтә мөмкинлектәрҙе файҙалана.

Быйылғы навигация сезонында «Куйбышевгидрострой»ына ғына 18 тонна төрлө йөк оҙатылды. «Салауат Юлаев» пароходының командаһы «Куйбышевгидрострой»ының заказын билдәләнгән сроктан алда алып барып, үҙенең бурысын намыҫ менән үтәне.

F. Идрисов.

Отличнo сифат бригадалары

Сталинсе эпоханың бөйөк төҙөлөштәренән заказдар алыу Өфө телефон аппараттары заводында продукцияның сифатын күтәреү өсөн көрәште яңы баҫҡысҡа күтәрҙе. Мәҫәлән, заводта 1949 йылда отличнo сифатлы продукция сығарыу өсөн йәйелдерелгән социалистик ярышта 45 бригада ҡатнаша ине. Уларҙың һаны 1951 йылдың май айына 116 бригадаға етте. 1949 йылда «Отличнo сифатлы бригада» исеме ай һайын 15-20 бригадаға бирелһә, 1951 йылдың апрель айы йомғаҡтары буйынса 40 бригадаға һәм 3 участкаға бирелде.

Бөйөк коммунизм заказдарын үтәүҙә Ғагин, Мещинская, Мратова, Кочетков, Антипин иптәштәр етәкселек иткән бригадалар яҡшы эшләйҙәр.

С. Ғәлиев,

Өфө телефон аппараттары заводының завком председателе.

Белорет ҡорос-сыбыҡ заводы коллективы ай һайын коммунизм төҙөлөштәренән заказдар ала. Заказдар һәр ваҡыт срогынан алда һәм юғары сифатлы итеп үтәлә.

Һүрәттә: ҡорос-сыбыҡ заводының иң яҡшы канатсыһы иптәш Н. Яппаров эш өҫтөндә. Ул нормаһын систематик 150 процентҡа үтәй. П. Петров фотоһы.

Сталинсе бөйөк төҙөлөштәрҙең заказдарын үтәүҙә

Беҙҙең райондың предприятие коллективтәре лә, бөтә совет халҡы кеүек, коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә заказдар үтәйҙәр. Улар был грандиоз төҙөлөштәргә ярҙам итеүҙе үҙҙәренең почетлы бурысы итеп һанайҙар. Төп Төркмәнстан каналы төҙөлөшөнән заказ килгәс, электр оборудованиеләре заводы коллективы уны ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланы һәм 5 мең предохранитель, 280 рубильник етештереү өсөн социалистик ярыш йәйелдерҙе. Шул уҡ ваҡытта Куйбышев, Сталинград гидроэлектростанцияларын төҙөлөштәренән дә заводҡа заказдар килде. Был көндө завод коллективенең дөйөм митингеһе булды. Эшселәр, инженер-техник работниктәр һәм хеҙмәткәрҙәр заказдарҙы срогынан алда үтәү өсөн стахановсы вахтаға баҫтылар.

Завод партия ойошмаһы һәм партбюро үҙенең бөтә энергияһын уңышты яулап алыуға юнәлдерҙе. Ул агитаторҙар менән кәңәшмә үткәрҙе. Кәңәшмәлә коллектив араһында политик-массовый эштәр алып барыу өсөн агитаторҙарға конкрет күрһәтмәләр бирелде. Һөҙөмтә, әлбиттә уңышлы булды. Бөйөк төҙөлөштәрҙән килгән заказдар ваҡытынан алда үтәлделәр. Май айының икенсе яртыһында Төп Төркмәнстан каналына 4 мең предохранитель, 280 рубильник, Куйбышев гидроэлектростанция төҙөлөшөнә 242 рубильник һәм 363 предохранитель, ә Сталинград ГЭС-ына бөтәһе 1125 рубильник етештерелде һәм оҙатылды.

Райондың башҡа предприятие коллективтәре лә коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре заказдарын шундай уҡ юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге менән үтәйҙәр. Яҙыу машиналары заводы коллективы Куйбышев ГЭС-ына 250 яҙыу машинаһын срогынан алда оҙатты. Март айында Куйбышев ГЭС-ынан Октябрь революцияһы исемендәге суднолар ремонтлау заводына һәр береһе 300-әр тонна йөк һыйҙырышлы 2 металл баржа төҙөү тураһында заказ алынды. Заказ коллективтең дөйөм йыйылышында тикшерелде һәм срогынан алда үтәргә ҡарар ителде. Беренсе баржа июль айында, икенсеһе — августа оҙатылырға тейеш. Коллектив был почетлы заказды үтәү буйынса күп кенә әҙерлек саралары үткәрҙе. Тәжрибәле бригадирҙар А. П. Капитонов һәм Н. С. Герасимов иптәштәр етәкселегендә 2 котельщиктар бригадаһы ойошторолдо. Баржаларҙы төҙөү өсөн секцион ысул менән алдан уҡ майҙан әҙерләнде.

Хәҙер корпустың һыу аҫты өлөшөнөң 7 секцияһы әҙерләндә лә инде. Заказды үтәү буйынса иптәш Капитонов бригадаһы коллективы өлгөлө эшләй. Ул смена һайын 1,5 норма бирә. Котельщиктарҙан: А. Ганюшкин, И. Гуськов, Р. Ғәзизов һәм башҡа иптәштәрҙең хеҙмәттәре ҙур. Ә электросварщик иптәш С. Тихохин көндәлек нормаһын 160 процентҡа үтәй. Бындай коллективтәр хәҙер районда күп. Улар партия, профсоюз ойошмалары етәкселегендә үҙҙәренең бөтә энергияларын коммунизм төҙөлөштәрен тиҙерәк тамамлау өсөн бирәләр.

Беҙҙең районда уңыштар ҙур. Ләкин улар менән бергә беҙҙә ҙур ғына етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел әле. Күптән түгел ВКП(б)-ның район комитеты бюроһы үҙенең ултырышында предприятие етәкселәренең бөйөк төҙөлөштәргә заказдар үтәүе буйынса отчетын тыңланы. Унда ҙур ғына етешһеҙлектәр асылды. Район комитеты бюроһы предприятие етәкселәрен заказдарҙы срогынан алда үтәүҙә булған бөтә кәмселектәрҙе бөтөрергә тәҡдим итте. Шулай уҡ ул предприятиеләрҙәге партбюро секретарҙарына сталинсе төҙөлөштәргә заказдарҙы үтәү эшенә айырыуса ҙур контроль булдырырға тәҡдим итте.

Хәҙер партияның район комитеты предприятиеләрҙең бөйөк төҙөлөштәрҙән килгән заказдарҙы һәм производство программаһын срогынан алда үтәү өсөн рухландырғыс көс булып тора. Райондың промышленность предприятиеләре коллективтәре тарафынан йыллыҡ пландың срогынан алда үтәлеүенә һис шикһеҙ ышанабыҙ.

Г. Вәлиев,

ВКП(б)-ның Ленин райкомы секретаре.

Коммунизм төҙөлөштәренә—отличнo сифатлы канат

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре заказын үтәү — беҙҙең металлургтар өсөн ҙур шатлыҡ. Сөнки ул төҙөлөштәр — бөтә халыҡ эше. Уларҙың тиҙерәк тамамланыуы беҙҙе коммунизмға яҡынайта, тыныслыҡ фронтын нығыта.

Белорет ҡорос-сыбыҡ заводы коллективы бөйөк төҙөлөштәрҙән алынған заказдарҙы беренсе кварталда срогынан алда арттырып үтәне. Икенсе кварталда Волга—Дон каналы төҙөлөшөнән яңы заказ алынды. Беҙгә 150 тонна канат бирергә кәрәк булды. Беҙ уны апрель айында уҡ оҙаттыҡ.

Заказдарҙы үтәгән көндәрҙә беҙ айырыуса яҡшы эшләйбеҙ. Сөнки һәр кешенең бөйөк төҙөлөштәргә күберәк ярҙам иткеһе килә. Апрель айында Волга—Дон каналы өсөн әҙерләнгән канатҡа кәрәк булған ҡорос сыбыҡтарҙы беҙ һүҙып бирҙек. Ошо айҙағы беҙ апрелдә бөтә завод, бөтә цех менән яҡшы эшләнек.

Беҙ эшләгән 1-се номерлы цех социалистик ярышта беренсе урында. Был уңыш бөйөк төҙөлөштәргә заказдарҙы срогынан алда үтәү өсөн көрәш осоронда яулап алынды.

Беҙҙең бригада йыуан ҡорос сыбыҡтар һүҙыу эшендә эшләй. Был операция—ҡорос сыбыҡ һүҙыу эшенең иң яуаплы һәм ҡатмарлы участкаһы. Шуға ҡарамаҫтан бригада коллективы эш нормаһын систематик арттырып үтәй. Бригада бер нисә ай инде «Отличнo сифат бригадаһы» исемен тотоп килә. Һуңғы айҙарҙа бригаданың эшендә уңыштар ҙур. Брак яһауға юл ҡуйылмай. Ҡорос сыбыҡтар һүҙыусылар Нагаев, Муспн, Хәжиәхмәтов иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр.

Уңыштар тик беҙҙең бригадала ғына түгел. Башҡа бик күп бригадаларҙа ошондай патриотик эш күрһәттеләр. Эш темпы үҫә һәм камиллашә бара.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре заказдарын үтәү — патриотик күтәрелештең иң яҡшы күҙәлнеше ул.

Х. Ғәбидуллин,
Х. Юлҡотлин,

Белорет ҡорос-сыбыҡ заводының 1-се номерлы цехы эшселәре.

Изге эште үтәүҙә

Мин фрезеровщик. Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре өсөн станоктарҙың бик күп деталдәрен эшкәртергә тура килә. Һәр бер деталде эшкәрткәндә, коммунизм төҙөүҙә үҙемдең дә ҡатнашлығымды күрәм. Шуға ла көндән-көн яҡшыраҡ эшләһе килә.

Металды юғары тиҙлектә киҫеү режимендә эшләү минең хеҙмәтемдә ҙур әһәмиәткә эйә. Сөнки был коммунизм төҙөлөштәренән алынған заказдарҙы срогынан алда үтәргә ярҙам итә. Мин юғары тиҙлектә эшләү генә аҙ әле. Юғары сифатлы продукция ла етештерергә кәрәк. Быны мин яҡшы аңлайым. Уны беҙҙән бөйөк төҙөлөштәр талап итә. Шуға ла мин тик отличнo сифатлы ғына продукция етештереү өсөн көрәшәм. Минең тырышлығым бушҡа китмәне. Күптән түгел СССР-ҙың станоктар төҙөү министры миңә «Станоктар төҙөү министрствоһының иң яҡшы скоростниге» исемен бирҙе. Мин хәҙер ике станокта эшләй башланым. Уларҙың икеһен дә социалистик һаҡлыҡҡа алдым.

Беҙҙең завод коллективы Куйбышев ҡалаһының станоктар төҙөү заводы коллективы менән ярыша. Май айында ярыш договорын тикшереү буйынса беҙҙең заводтың вәкилдәре уларға барҙылар. Мин дә барҙым. Юлда барғанда, Куйбышев гидроэлектростанцияһы төҙөләсәк урынды күрергә тура килде. Унда төҙөлөш эштәре бик ҙур күләмдә һәм юғары темп менән бара. Коммунизмдең был бөйөк төҙөлөшөн күргәндән һуң миндә хеҙмәткә энергия тағы ла артты. Мин нормамды ес тапҡырға арттырып үтәргә һәм тик отличнo сифатлы ғына продукция етештерергә йөкләмә алдым.

А. Томилин,

Стәрлетамаҡ Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводының фрезеровщигы.

«Туймазыбурнефть» тресында иптәш Алляров етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы коммунизм төҙөлөштәре хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫып эшләй. Бригада күптән түгел, тәүлеккә 180 метр проходка бирел, яңы рекорд ҡуйҙы.

Һүрәттә: бораулау мастеры комсомолец Р. Алляров.

А. Черзинский фотоһы.

Государствоға малсылык продукттарын тапшырыуҙы көсәйтәйек!

Республикабыҙҙың колхоздары һәм совхоздары общественный малсылыкты [illegible] һуңғы йылдарҙа малсылык продукттары етештереүҙе байтак арттырҙылар.

Күп кенә алдынғы колхоздар ит, һөт, май һәм башҡа продукттар тапшырыу буйынса государство алдындағы йөкләмәләрен срогынан күп алда арттырып үтәп баралар.

Көйгәте районы (Әҙерләүҙәр министрствоһының вәкиле иптәш Закиров) [illegible] государствоға малсылык продукттары тапшырыу планын республикала беренсе булып үтәгәйне. [illegible] 1951 йылдың беренсе кварталында уҡ государствоға ит һәм һөт тапшырыу планын [illegible] Благовар, Туймазы һәм Шишмә райондары ла беренсе кварталда [illegible] Аургазы, Бүздәк, Дәүләкән, Иглин, Кандра, Саҡмағош райондары [illegible] йөкләмәләрен срогынан алда үтәнеләр.

Ләкин республикабыҙҙың күпселек районы [illegible]

[illegible]

У. Камалов.

Кошсолокто үҫтереүгә ныҡ иғтибар итергә

[illegible]

... алыу планын 35 — 70 процентҡа ғына үтәнеләр. Ә Архангель, Нуриман һәм Ғафури районларының колхоздары бөгөнгәсә бер генә себеш тә алмағандар.

Өфө районы Каганович исемендәге [illegible]

[illegible]

Кошсолокто үҫтереү өсөн көрәш йәйелдерелгән хәҙерге осорҙа бындай етешһеҙлектәрҙе ҡырҡа бөтөрергә һәм был эштә ҡамасаулаусыларға ҡаршы ныҡ көрәшергә кәрәк.

Х. Йосопов.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре

КРЫМ ДАЛАҺЫНДА

Ҡрым далаһы үҙенең ҡара, ҡара-ҡуңыр тупраҡлы һәм ҡыҙыл балсыҡлы ерҙәре менән Сиваштан алып тау итәктәренә тиклем һуҙыла. Тупраҡтың уңдырышлылығы, йылылыҡтың бик күп булыуы бында беренсе сорт бойҙай, мамыҡ, емеш, сәтләүек, виноград, тәмәке, йәшелсәләр һәм башҡа культуралар үҫтереү өсөн бөтә шарттар тыуҙыра. Ләкин Ҡрымда ямғыр һирәк була. Дымлылыҡтың етешмәүе юғары һәм тотороҡло урожай алыуға ҡамасаулай.

Совет власы йылдарында был өлкәлә ҙур ғына агротехник һәм гидротехник эштәр үткәрелде. Һуғарыла торған ерҙәрҙең майҙаны, революцияға тиклемге ваҡытҡа ҡарағанда дүрт тапҡыр артты. Далала насос станциялы артезиан скважиналары төҙөлдө һәм төҙөлә, быуалар һәм һыу йыйылыу урындары булдырылды, баҫыу һаҡлаусы ағастар үҫтерелә.

Большевиктәр партияһы, Совет хөкүмәте һәм иптәш Сталин үҙе Ҡрымды сәскә атыусы баҡсаға әүерелдереүгә ҙур иғтибар бирәләр. Беҙ сталинсе хәстәрлекте һәр бер аҙымда күрәбеҙ. Машина-трактор һәм урман үҫтереү станциялары иң яңы ҡеүәтле техника менән тәьмин ителгәндәр. Машиналар ҡул хеҙмәтен ҡыҫырыҡлап сығаралар һәм улар, юғары техника менән бергә, ауыл хужалығы продукттарының урожайын арттырыуға булышлыҡ итәләр. Уң меңләгән «Кавказ питомецтәре» — лимондар, әфлисундар, мандариндар һәм өлкә өсөн яңы булған башҡа субтропик культуралар, төньяҡ сикте үтеп сығып, Ҡрым ерендә үҫә башланылар. Быйыл Ялтаның, Алуштаның һәм башҡа райондарҙың колхоздары лимон, әфлисун һәм мандариндарҙан беренсе урожай алалар.

Хөкүмәттең Каховка гидроэлектростанцияһы, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡрым каналдары ҡороу тураһындағы ҡарарын Ҡрым хеҙмәтсәндәре ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алдылар. Был ҡарар өлкәнең экономик үҫешендә яңы, яҡты бит асасаҡ. Бер нисә йыл үткәс, Днепр үҙенең һыуын ҡояшҡа бай далаға түйғансы эсерер.

Төньяҡ Ҡрым каналы Ҡрымдың уңдырышлы 300 мең гектар ерен Днепр һыуы менән һуғарасаҡ. Дала райондарын һыу менән тәьмин итеү проблемаһы тулыһынса хәл ителәсәк. Ерҙәрҙе һуғарыу күп урожай алыуҙы тәьмин итәсәк. Өлкәлә ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарын үҫтереү өсөн бик ҙур перспективалар асыласаҡ. Дала райондарындағы колхоздар ҙур майҙандарҙа ҡиммәтлерәк яңы культуралар үҫтерә аласаҡтар. Ҡрымда һуғарыу юлы менән үҫтерелә торған мамыҡсылыҡтың яңы районы буласаҡ.

Колхоздар һәм совхоздар ҙур күләмдәрҙә баҡсасылыҡ һәм виноградсылыҡ эштәрен йәйелдерә аласаҡтар. Баҡсасылыҡ һәм виноградсылыҡ майҙандары иң яҡын йылдарҙа, һуғышҡа тиклем булғанға ҡарағанда, ике тапҡыр тиерлек үҫәсәк.

Дала райондары юғары сифатлы столовой, десертный винолар, совет шампанскийе, шулай уҡ натураль виноград һуттары яһау өсөн ҡеүәтле сырье базаһына әйләнәсәктәр.

Ҡрымда Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем эфир-майлы культуралар һис тә үҫтерелмәй ине. Хәҙерге ваҡытта бында эфир-майлы розалар, лавандар, мускат шалфейе үҫтерелә. Был культураларҙың эфир майҙары Францияла үҫтерелә торған иң яҡшы эфир майҙарынан өҫтөн тора һәм улар парфюмерияла, медицинала, аҙыҡ промышленносенда һәм башҡа маҡсаттар өсөн киң рәүештә ҡулланылалар.

Ерҙәрҙе һуғарыу эфир-майлы культураларҙың сәсеү майҙандарын арттырыуға ғына түгел, бәлки ал герань, тубероза һәм башҡалар кеүек ҡиммәтле еҫле үҫемлектәр үҫтерергә лә мөмкинлек бирәсәк.

Дымлылыҡтың етешмәүе туҡыу промышленносе өсөн бик кәрәк булған варсовальный түбырсыҡтар үҫтереүгә ҡамасаулай ине. Ерҙәрҙе һуғарыу шарттарында был культура юғары урожай бирәсәк һәм беҙҙең өлкә илдең был продукцияға булған ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә аласаҡ. Колхоздарҙа ебәкселекте йылдамыраҡ темп менән үҫтереү өсөн дә яҡшы шарттар тыуасаҡ.

Ерҙәрҙе һуғарыу өлкәнең төп ориҙөк культураһының — Ҡрым бойҙайының урожайлылығын күтәреү өсөн дә айырыуса әһәмиәтле.

Күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡ үләндәр һәм башҡа мал аҙығы культураларын йыйнап алыу бер нисә тапҡыр үҫәсәк. Общественный малсылыҡ туҡлыҡлы, ҡиммәтле аҙыҡтар аласаҡ һәм малдарҙың продукт биреүсәнлеге байтаҡ күтәреләсәк.

Һарыҡсылыҡтың үҫеүе өсөн яҡшы перспективалар асыласаҡ. Хәҙерге ваҡытта Ҡрым колхоздарында иң яҡшы каракуль һәм нәҙек йөнлө һарыҡ тоҡомдары үрсетелә. Мал аҙығы базаһы яҡшырыу менән өлкәлә һарыҡтар һаны бер нисә йыл эсендә һуғышҡа тиклемге кимәлде бер ярым тапҡырҙан артығыраҡҡа уҙып китәсәк.

Буласаҡ Төньяҡ Ҡрым каналы районында хәҙер эш йәйелдерелде инде. «Укрводпроект»тың геологтары, геодезистәре, топографтары трассаны тикшереү өҫтөндә эшләйҙәр. Улар Ҡрымда күп тиҫтәләгән километрҙар үттеләр ҙә инде. Тикшеренеүселәрҙе бөтә ерҙә иң ҡәҙерле ҡунаҡтар кеүек ҡаршы алалар. Колхозсылар уларға һәр төрлө ярҙам һәм булышлыҡ күрһәтә.

Тикшеренеүселәр Сивашты Ҡрым менән Украина араһын иң тар — ес километрлы һыу айыра торған урындарҙы тикшерҙеләр. Былар — тарихи урындар. 1920 йылда бында М. В. Фрунзе командаһындағы ҡыҙыл полктар Врангель ғәскәрҙәренә өмөргәс удар яһанылар. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Совет Армияһы частәре, сталинсе гениаль стратегик планды тормошҡа ашырып, Сивашты аша сыҡтылар һәм Гитлерҙең Перекоп валындағы нығытылған рубеждәренә тылдан һөжүм иттеләр. Хәҙер бында коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренең береһе булған Төньяҡ Ҡрым каналы трассаһы үтә.

СССР Геология министерствоһының Ҡрым бүлеге работниктәре далаға сыҡтылар. Улар киң майҙандарҙа, киләсәктә һуғарыласаҡ ерҙәрҙең һәм һыу алып китә торған каналдарҙың физико-техник сифаттарын өйрәнәләр. Тик бер Джанкой районы ерҙәрендә генә 600 бораулау скважинаһы менән алынған тупраҡ тикшерелә.

Джанкой ҡалаһында күптән түгел генә төҙөү-монтаж управлениеһе ойошторолдо. Төҙөүселәр 1951 йылда эшселәр һәм специалистар өсөн тиҫтәләгән өй, ярҙамсы предприятиеләр өсөн корпустар, административ биналар һәм башҡалар бирергә тейештәр. Һәр көндө төҙөлөш өсөн материалдар һәм йыһаздар килеп тора.

Төҙөүселәр коллективы бөйөк төҙөлөштә эшләргә үҙе теләк белдергән кешеләрҙән ойошторолған. Канал төҙөүҙә ҡатнашырға теләүҙәре тураһында Советтар Союзының бөтә мөйөштәренән хаттар килеү туҡтамай.

Ҡрымдың һәр бер хеҙмәтсән кешеһе бөйөк төҙөлөштең ҡатнашсыһы булып тора. Төньяҡ Ҡрым каналы өсөн заказдар үтәүсе предприятиеләрҙең эшселәре һәм специалистәре ныҡышмалы рәүештә эшләйҙәр. Феодосия һәм Керчтәге төҙөү материалдары эшләүсе заводтар күп һанда кирбес һәм черепицалар, эсе ҡыуыш керамик блоктар һәм керамик торбалар әҙерләйҙәр. Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡрым каналдары төҙөлөшенә, Евпатория карьеренан ҡом, Октябрьский карьеренан таш-ҡабырсаҡ китерелә. Был предприятиеләр киңәйтеләләр һәм уларға реконструкция яһала.

Фәнни-тикшеренеү учреждениеләренең коллективтәре һәм специалистәре урында күп һанда цемент, мәрмәр, төҫлө әҙбиз һәм башҡа төҙөлөш материалдары әҙерләү мөмкинлеген өйрәнәләр.

СССР Фәндәр Академияһының Ҡрым филиалы работниктәре Төньяҡ Ҡрым төҙөлөшөнә ҡиммәтле вклад индерәләр. Геология секторы проект төҙөүселәр өсөн территорияның ер аҫты төҙөлөшө картаһын эшләй. Фәнни работниктәр тау тоҡомдарын өйрәнәләр. Геологтар буласаҡ канал районының ер өҫтө төҙөлөшөн өйрәнәләр. Киев һәм Ленинград университеттәренең, Ҡрым педагогия институтының фәнни работниктәре ярҙамы менән Ҡрымдың дала районларының геоморфологик картаһы әҙерләнә.

Илдең бик күптәнге фәнни-тикшеренеү учреждениеләренең береһе булған Молотов исемендәге Никитинский ботаника баҡсаһы коллективы Төньяҡ Ҡрым каналы йоғонтоһо зонаһындағы колхоздарға һәм совхоздарға ҙур ярҙам күрһәтә. Киң далаларҙа яңы емеш баҡсалары төҙөлә.

Урман специалистәре һәм ботаниктәр төп трассаны, һыу алып китә торған каналдарҙы, һыу һаҡлаусы урындарҙы һәм һуғарыла торған ерҙәрҙең сиктәрен йәшелләндереү, ағастар ултыртыу өсөн төрлө райондарҙың тупраҡ-климат шарттарын иҫәпкә алып, тупраҡ тоҡомдарын өйрәнеүҙе тамамланылар.

Һуғарыу зонаһында булған колхоздар һәм совхоздар Днепрҙың һыуын файҙаланыуға актив рәүештә әҙерләнәләр. Улар ауыл хужалығының яңы тармаҡтарын үҫтереү өсөн пландар төҙөйҙәр, яңы емеш, виноград һәм тут питомниктәре төҙөйҙәр, элек булғандарын киңәйтәләр, төп канал һәм һыу алып китә торған каналдар тирәһенә ағастар ултыртыу өсөн материалдар әҙерләйҙәр.

Тәжрибә станцияларында, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа баҫыуҙарҙы һуғарыуҙың иң рациональ ысулдары өйрәнелә.

Джанкой, Азов, Совет, Красно-Перекоп райондарындағы һуғарыла торған участкалары булған ауыл хужалығы артелдәренең колхозсылары һуғарыуҙың бик ҙур экономик әһәмиәтен үҙҙәренең тәжрибәләрендә беләләр.

Яҡшы урожай алына торған йылдарҙа Джанкой районының һуғарылмай торған ерҙәрендә гектарҙан 25 центнерға тиклем бойҙай, 7 центнерға тиклем мамыҡ, 120 центнерға тиклем томат йыйнап ала инеләр. Ә һуғарыла торған участкаларҙа, иң ҡорылоҡло йылдарҙа ла, һәр бер гектарҙан: 35 центнер бойҙай, 20 центнер мамыҡ, 350 центнер томат алып килделәр. 1950 йылда Ҡрымконсервтресының йәшелсәлек совхоздары Джанкой районындағы һуғарыла торған ерҙәрҙә гектарынан 430—450 центнер томат алдылар. Ҡрым колхоздарының, совхоздарының һәм ауыл хужалығы учреждениеләренең тәжрибәһе һуғарыла торған ерҙәрҙә күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡ үләндәрҙең, картофтың, фрукта һәм виноградтың урожайы бер нисә тапҡыр юғары була икәнен күрһәтә.

Төньяҡ Ҡрым каналы индустриаль Феодосия, Керчь ҡалаларын һыу менән тәьмин итеү проблемаһын хәл итәсәк. Днепрҙың тоҙһоҙ һыуы бик күп күмер рудаһы запастарын файҙаланыу өсөн һәм промышленностең металлургия, руда һәм башҡа тармаҡтарын киң рәүештә үҫтереү өсөн киң мөмкинлектәр асасаҡ.

Каховка гидроэлектростанцияһы энергияһы Ҡрымдың дала районларындағы колхоздарында һәм совхоздарында ауыр хеҙмәт процестарын электрләштереүҙе тәьмин итәсәк. Электрокомбайндар, электротракторҙар һәм башҡа машиналар эшләйәсәк.

Өлкәнең партия һәм совет ойошмалары канал төҙөүселәргә һәр төрлө ярҙам күрһәтәләр. Кәрәкле йөктәрҙе тимер юл һәм автомобиль транспорты менән төҙөлөшкә оҙатыу, шулай уҡ төҙөлөш өсөн булған заказдарҙы үтәүсе предприятиеләр эше өҫтөнән общественный контроль ҡуйылды. Төҙөлөшкә ярҙам күрһәтеү өсөн өлкәнең эске резервтәре мобилизациялана.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөшө булған Төньяҡ Ҡрым каналын уңышлы рәүештә тормошҡа ашырыу өсөн Ҡрымдың эшселәре, хеҙмәткәрҙәре, инженер-техник работниктәре партияның өлкә комитеты етәкселегендә бөтә сараларҙы күрерҙәр.

П. Титов,

ВКП(б)-ның Ҡрым өлкә комитеты секретаре.

Өфө — Дим юлын төҙөкләндереү воскресникгенда 6 меңгә яҡын кеше ҡатнашты.

Һүрәттә: воскресникҡа ҡатнашыусыларҙан бер төркөм юлға ҡырсын таш йәйә. А. Зараев фотоһы.

Юл төҙөкләндереү буйынса воскресник

17 июндең иртәһе. Сәғәт алты. Ә Өфө—Дим юлында ғәҙәттә булмаған көслө хәрәкәт: бер-бер артлы автомашиналар ағымы үтә, юлға ҡырсын таш йәйә башлаған кешеләрҙең дәртле йырҙары яңғырай...

Юл төҙөкләндереү буйынса воскресник ойошҡанлыҡ менән башланды. Воскресникҡа Өфө ҡалаһының Жданов районынан 3 мең ярымға яҡын кеше, 140 автомашина, Дим районынан 2 меңгә яҡын кеше, 33 автомашина килде.

Бына Дим станцияһының 69 йәшлек эшсеһе Константин Яковлевич Коноваленко. Ул:

— Мине бөрәү ҙә саҡырманы. Үҙем теләп килдем, — ти.

Тынғыһыҙ ҡартҡа автомашиналар оҙаҡ йөрөгән төҫлө тойолдо. Ул үҙе ҡырсын таш тейәгән автомашинаға ултырып бушатыусылар янына китте.

Көндөҙгө сәғәт 11-гә Жданов районының Өфө киҙе-мамыҡ комбинаты, 8-се Март исемендәге тегеү фабрикаһы, мотобаза, «Пимокат» һәм 18-се партсъезд исемендәге артелдәрҙең коллективтары үҙҙәренә бирелгән заданиене үтәгәйнеләр инде. Шуға ҡарамаҫтан, эш әлеккә ҡыҙыулығы менән дауам итте.

Кис, башҡарылған эшкә йомғаҡ яһалды. Һөҙөмтә, әлбиттә, яҡшы. Жданов районы хеҙмәтсәндәре 7 километр оҙонлоғондағы юлға, йәки 50 мең квадрат метр ергә, Дим районы хеҙмәтсәндәре 4 километр оҙонлоғондағы юлға ҡырсын таш йәйгәндәр.

Ю. Әхмәдиев.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Миякә районы Ворошилов исемендәге колхозда 1-се номерлы баҫыусылыҡ бригадаһы йылҡысыһы иптәш Абдулла Иҙрисов үҙе тәрбиәләгән һәр бер бейәнән йыл һайын ҡолон алып үҫтерә. Ул быйыл 17 бейәнән 17 ҡолон алып тәрбиәләй.

Ғ. Зарипов.

* * *

Краснокама районы Йәңегет МТС-ында иптәш Ғиҙетдинов етәкселек иткән трактор бригадаһы трактористары баҫыу эштәрен уңышлы башҡарҙылар. Һөҙөмтәлә 740 урынына 870 гектар майҙанда сәсеү үткәрелде, пар һөрөү планы арттырып үтәлде.

Киров исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән был механизаторҙар быйыл һәр гектарҙан 18-әр центнер урожай үҫтерергә һүҙ бирҙеләр.

Ә. Моратов.

* * *

Баймаҡ. «Ҡыҙыл байраҡ» колхозы йылҡысылыҡты үҫтереүҙең 1951 йылғы планын 105 процентҡа үтәне. Йылҡысыларҙан Ғайса Сәетбатталов һәм Мөхәрәм Хәсәнов иптәштәр быйыл 42 бейәнән 42 ҡолон алып үҫтерҙеләр.

Колхоздың башҡа фермалары ла яҡшы эшләй. Һарыҡ ҡараусыларҙан Ғәшүрә Ғәлинә һәм Мәзинә Дәүләтбаева иптәштәр быйыл һәр бер 100 баш һарыҡтан 120—125-әр бәрәс алыуға өлгәштеләр.

Б. Дияров.

* * *

Шәмән совхозының иптәш Галькевич етәкселек иткән бригадаһы былтыр 113 гектар майҙандағы бойҙайҙың һәр гектарынан 22-шәр центнер урожай алды. Бригада быйыл да юғары урожай алыу өсөн уңышлы көрәшә.

Иптәш Галькевич бригадаһы 1950 йылдағы эш йомғаҡтары буйынса Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашыуға кандидат булып тора. Был совхоздың агролесомелиораторы Янченко, суслҡ ҡараусылары Бурова, Аксенова иптәштәр ҙә күргәҙмәгә кандидат итеп күрһәтелделәр.

М. Баранов.

* * *

Әбйәлил. «Красная Башкирия» орденоносец совхозында иптәш Әлмөхәмәтов 1930 йылдан бирле тракторист һәм комбайнер булып эшләй. Ул һәр йыл һайын эш нормаһын систематик рәүештә арттырып үтәй.

Үткән йылдағы сезонда иптәш Әлмөхәмәтов «Сталинец—6» тағылма комбайны менән 900 гектар иген урып, 400 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Ул быйылғы сезонда сәғәт графигы менән эшләп, мең гектар майҙандың урожайын йыйнарға һәм яғыулыҡҡа байтаҡ экономия яһарға социалистик йөкләмә алды.

У. Сафарғәлин, Н. Хәсәнов.

* * *

Илеш. Район культура-ағартыу бүлеге тарафынан ойошторолған 6 кеше составындағы агит-культбригада колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереүҙә күп кенә практик эш башҡарҙы. Ул яҙғы баҫыу эштәре осоронда 46 ауылда булып, баҫыу стандарында һәм трактор бригадаларында Ғ. Насыровтың «Ҡуйын дәфтәре» исемле пьесаһын ҡуйҙы, концерт номерҙары менән сығыш яһаны.

С. Афзалов.

Тыныслыҡ Пакты өсөн!

АВСТРИЯ

ВЕНА, 17 июнь. (ТАСС). Тыныслыҡты яҡлаусыларҙың Австрия советенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Австрияла 666.312 кеше ҡул ҡуйған. Ҡултамғалар йыйыу дауам итә.

ДАНИЯ

КОПЕНГАГЕН, 17 июнь. (ТАСС). Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалар йыйыу буйынса кампания Данияла дауам итә. 17 июнгә Мөрәжәғәткә 92.787 кеше ҡул ҡуйған.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 17 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 17 июнь-дә, бөтә фронттарҙа ла Корея Халыҡ армияһының частары, Ҡытай добровольцтарының отрядтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәттә, 38-се параллелдән төньяҡтараҡ Америка-Англия интервенционистик һәм лисынмансы ғәскәрҙәренең ярһыулы атакаларын уңышлы кире ҡағыуҙы дауам иттерәләр, уның йәнле көсөнә һәм техникаһына ҙур юғалтыуҙар килтерәләр, тип хәбәр итте.

Үҙәк һәм көнсығыш фронттарҙа Халыҡ армияһының частары 15 һәм 16 июнда булған һуғыштарҙа дошмандың унда артығыраҡ атакаһын уңышлы кире ҡағып, уның йәнле көсөнә ҙур юғалтыуҙар килтерҙеләр.

Халыҡ армияһының төнгө бомбаға тотоусы авиацияһының Н соединениеһы 16 июнда төндә Американың Сувондағы аэродромын бомбаға тотто.

17 июнда дошман самолеттарын күҙәтеүсе уҡсылар-охотниктар дошмандың 3 самолетын атып төшерҙеләр.

Ҡытай халыҡы Ҡытай коммунистар партияһының 30 йыллығын билдәләргә әҙерләнә

ПЕКИН, 16 июнь. (ТАСС). Ҡытай коммунистар партияһының төҙөлөүенә 1 июлдә 30 йыл тула. Ҡытай халыҡы был күренекле датаны тантаналы итеп билдәләргә әҙерләнә. Илдең ҡалаларында, провинцияларында һәм административ райондарында байрам үткәреү буйынса әҙерлек комитеттары төҙөлә.

Газеталар һәм журналдар данлы йыллыҡҡа арналған мәҡәләләр иғлан итәләр. «Ағымдағы ваҡиғалар» журналы «Ҡытай компартияһына нигеҙ һалыныуҙың 30 йыллығын байрам итеүгә ҡарата» һәм «Ҡытай коммунистар партияһы нимә ул» тигән мәҡәләләр баҫып сығарған.

«Дунбэйжибао» газетаһы 15 июнда яҡынлашып килгән күренекле дата айҡанлы пропагандистик эш бурыстарына арналған мәҡәлә урынлаштырған.

Мәҡәләләр Ҡытай компартияһы көрәшенең данлы революцион юлын ентекле итеп яҡтырталар. «Ҡытай компартияһына нигеҙ һалыныуҙың 30 йыллығын байрам итеүгә ҡарата» тигән мәҡәләлә былай тип әйтелә: «Ҡытай компартияһының 30 йыллығын байрам итеп, беҙҙең халыҡыбыҙ, партиябыҙҙың бөйөк уңыштарын үҙ уңыштары кеүек итеп билдәләй».

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 15 июнь. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 15 июнда СССР вәкиле А. Громыко председателлегендә дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының 71-се ултырышы булып үтте.

Франция вәкиле Пароди Франция хөкүмәтенең совет хөкүмәтенә нотаһын СССР вәкиленә тапшырырға үҙ хөкүмәтенән инструкция алыуы тураһында белдерҙе.

Пароди был нотаның текстын уҡып сыҡты, унда, Совет хөкүмәте Франция хөкүмәтенең 31 майҙағы нотаһына яуап итеп, 4 июндәге үҙенең нотаһында урынбаҫарҙар кәңәшмәһенең эшен дауам иттереү теләгән белдергәйне һәм Франция хөкүмәте был тәҡдимде иҫәпкә алды һәм шул арҡала урынбаҫарҙарҙың ултырыштары дауам итте, тип күрһәтелә. Ләкин, тип билдәләй Франция нотаһы, был ултырышта, Төньяҡ-атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы пунктты көн тәртибенә индереү тураһында совет тәҡдиме буйынса урынбаҫарҙар килешеүгә өлгәшә алмаған, артабан прогреска өлгәшеүгә мөмкин булмауҙы күрһәттеләр.

Унан ары нотала, урынбаҫарҙар араһында был мәсьәлә буйынса фекерҙәр менән алмашыуҙы дауам иттереү ыңғай һөҙөмтәләр бирмәйәсәк һәм Франция хөкүмәте, дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре өс держава тарафынан 2 майҙа тәҡдим ителгән көн тәртибенең 3 вариантының береһе нигеҙендә йыйналһындар, тип тәҡдим итә, тип күрһәтелә. Билдәле булыуынса, был варианттарҙың өсөһөндә лә Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы пункт юҡ.

Великобритания вәкиле Дэвис һәм АҠШ вәкиле Джессеп тә Советтар Союзы хөкүмәтенә үҙ хөкүмәттәренең шундай уҡ йөкмәткеле нотаһын иғлан иттеләр.

Дэвис һәм Джессеп үҙ сығыштарында, Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базаларына ҡарата совет тәҡдимен үҙ хөкүмәттәренең ҡабул итергә риза булмауҙарын һәм шуға күрә урынбаҫарҙар кәңәшмәһен дауам иттереүҙе кәрәкһеҙ тип иҫәпләүҙәрен тағы ла бер тапҡыр раҫланылар.

СССР вәкиле Громыко тәүге тәртиптә, был ноталарҙың йөкмәткеһе менән танышыу өс держава хөкүмәттәренең 31 майҙағы үҙ ноталарында килтерелгән позицияны яҡлауҙарын ғына күрһәтә, тип билдәләне.

— Был ноталарҙан шулай уҡ өс держава хөкүмәтенең көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшергә һәм Европала тыныслыҡты тәьмин итеүҙән һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуҙың мөһим һәм ҡырҡа проблемаларын ҡарау өсөн министрҙар Советын саҡырыуҙы тәьмин итергә теләмәүҙәре күренә. Был, өс держава хөкүмәттәре һәм уларҙың вәкилдәре был кәңәшмәлә сит ил эштәре министрҙәре кәңәшмәһен саҡырыу тураһында һөйләгән бер ваҡытта, уларға министрҙарҙың бындай кәңәшмәһе Европала барлыҡҡа килгән көсөргәнешле хәлде бөтөрөү һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу маҡсаты өсөн түгел, ә ниндәйҙер башҡа маҡсаттар өсөн кәрәк булыуын күрһәтә.

Йомғаҡлау һүҙендә Громыко, өс державаның хөкүмәттәренең ноталарын совет делегацияһы Совет хөкүмәтенә тапшырасаҡ, тине. Көнбайыштағы өс держава вәкилдәренең тәҡдиме буйынса нәүбәттәге ултырыш 18 июнгә күсерелде.

Румынияның һауыҡтырыу йорттарында йәйге сезон асылды

БУХАРЕСТ. (ТАСС). Румынияның тиҫтәләгән мең хеҙмәтсәндәре иң матур урындарҙа — Ҡара диңгеҙ ярында һәм илдең таулы урындарында урынлашҡан күп һанлағы һауыҡтырыу йорттарына ял итергә киттеләр.

Санаторийҙарҙа, ял йорттарында һәм курорттарҙа быйыл урын һаны байтаҡ арттырылды. Уларҙа 279 мең хеҙмәтсән ял итәсәк.

Синайҙа бейек тауҙа яңы ике санаторий төҙөлдө. Быйыл һауыҡтырыу йорттарын киңәйтеүгә һәм ремонтлауға, үткән йылға ҡарағанда, средстволар 29 процентҡа артығыраҡ бирелде.

Санаторийҙар һәм ял йорттары өсөн медицина кадрҙарын әҙерләүгә сериёз иғтибар бирелә. Күптән түгел 200-гә яҡын врач һәм шундай уҡ һанда медицина сестралары махсус курстарҙы тамамланылар һәм һауыҡтырыу йорттарына даими эшкә киттеләр.

Софияла университетты реконструкциялау

СОФИЯ, 15 июнь. (ТАСС). Софияла Государство университетенең бинаһын реконструкциялау һәм киңәйтеү буйынса төп эштәр тамамланды. Улар Болгарияла халыҡ демократик власын урынлаштырғандан һуң күп тә үтмәй ҙур масштабтарҙа башланғайны.

София Государство университетенең яңы бинаһы 5 мең квадрат метр майҙанды алып тора, унда хәҙер тиҫтәләгән ҙур аудиториялар, ике ҙур актовый зал, клуб, библиотека, студенттар столовойын да индереп, бик күп һанда хеҙмәт бинаһары бар. Университетта хәҙерге ваҡытта шулай уҡ ҙур спорт залы бар.

Софияның төҙөкләндерелгән университеты — хеҙмәтсәндәрҙең белем алыуы һәм илдә культураның үҫеүе тураһында Болгария коммунистар партияһының һәм халыҡ демократик хөкүмәтенең арымай-талмай хәстәрлегенең яңы кәүҙәләнеше ул.

Венгрияла яҡшы урожай көтөлә

БУДАПЕШТ, 15 июнь. (ТАСС). Венгрияның игенселек министерствоһы сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү буйынса эш башҡарыу тураһында белдереү иғлан итте.

Бөтә илдә бөртөклө культуралар өлгөрәләр ҙә инде. Хәҙер көньяҡ комитеттарҙа көҙгө арпаны йыйыу үткәрелә, киләһе аҙнала ул бөтә илдә йыйнала башланасаҡ. 25 июнгә ярыш, ә ай аҙағында — бойҙай йыйнай башлаясаҡтар; бөтә был культураларҙан бик яҡшы урожай алыу көтөлә.

Шәкәр сөгөлдөрөн күмеү яҡшы бара; бөтә илдә был эштәрҙең 85 проценты үтәлде лә инде. Алынғы комитеттар шәкәр сөгөлдөрөн икенсе тапҡыр күмеүҙе 75 процентҡа үтәнеләр ҙә инде. Игенселек производство кооперативтары һәм яңғыҙаҡ крәҫтиән хужалыҡтары башҡа ауыл хужалығы культураларын тәрбиәләү буйынса ла ҙур эш алып баралар.

Югославия спортсмендәре титосы клика менән бәйләнеште өҙәләр

ВЕНА. (ТАСС). Ошо көндәрҙә Югославия йөҙөүселәренең командаһы Австрияға ярышҡа килде. «Эстеррейхише фольксштимме» газетаһының 14 июнда хәбәр итеүенә ҡарағанда, шул команданан 8 кеше Югославияға кире ҡайтырға теләмәгән. Был фактҡа аңлатма биреп, газета Югославия спортсмендәре титосы клика менән бәйләнеште тамам өҙөү өсөн беренсе мөмкинлекте файҙаландылар, тип билдәләй.

П. А. ПАВЛЕНКО

Совет әҙәбиәте ауыр юғалтыу к... Уның иң күренекле вәкилдәренең б...һе — яҙыусы-большевик, Сталин пре...һы лауреаты, СССР Верховный Советы... путаты Петр Андреевич Павленко у...

П. А. Павленко 1899 йылда т... юлсы семьяһында тыуған. Граждан... һуғышы йылдарында ул большевик... партияһына инә һәм үҙе теләп Ҡ... Армияға китә, красноармеец булы... мәт итә, унан һуң партия мәктәбе... мамлай һәм XI Кавказ армияһыны... риск йылға флотилияһына нигеҙ... раллы йылға пароходына политрук... билдәләнелә. Флотилияның комм... һуңынан махсус сик буйы отрядының... миссары булып эшләй.

Ҡыҙыл армиянан демобилизовать... ғандан һуң иптәш Павленко партия ... дә эшләй.

П. А. Павленконың беренсе ... ләре 1928 йылда баҫыла башлаһы. ... тәнҡитселәрҙең һәм уҡыусыларҙың ... барын шунда уҡ үҙҙәренә йәлеп итте... 1937 йылда сыҡҡан «Көнсығышта» ... маны П. А. Павленконы совет яҙыусы... рының беренсе сафтарына ҡуйҙы. Тал... лы яҙыусының ҡәләме аҫтынан сыҡ... һәр бер яңы әҫәр тормошто тәрән ... һәм художниктең юғары оҫталығы ... айырылды.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында С... веттар Союзына ҡаршы мәкерле һ... яһаған фашизмға, гитлерсе баҫҡынсы... -ларға ҡаршы көрәшкә ул үҙенең бөтә ... лантын, большевик булараҡ, үҙенең ... йөрәген бирә. П. А. Павленко — «Пр... да» һәм «Красная Звезда» газеталары... хәрби хәбәрсеһе.

П. А. Павленкоға «Александр Невский», «Ант», «Берлиндең еңелеүе» тигән ... фильмдарҙың сценарийҙары һәм «Бә... романы өсөн беренсе дәрәжәләге Стали... премиялары бирелде.

Тыуған ил алдындағы күренекле ... мәттәре өсөн П. А. Павленко Ленин ... дене, Ҡыҙыл Байраҡ, Ҡыҙыл Йондоҙ ... дендәре һәм медалдәр менән наградлан...

П. А. Павленко ҙур партия һәм ... ществённый-политик эш алып бара... Ул ВКП(б)-ның Ҡрым өлкә һәм Ялта ... ла комитеты бюроһының члены, Совет яҙыусылары Союзының Ҡрым бүлеге... яуаплы секретары, «Крым» альманах... ның редакторы, «Знамя» журналының редколлегия члены, СССР совет яҙыусылары Союзы Секретариатының члены ине.

П. А. Павленко Тыуған илгә т... сикһеҙ һөйгә һәм үҙ талантының, ... ҡайнар йөрәгенең бөтә көсөн уға бир...

А. Фадеев, А. Сурков, Н. С..., Н. Тихонов, А. Корнейчук, М. Шола-хов, И. Большаков, А. Софронов, Ф. Панферов, Л. Леонов, Ф. Гладков, В. Кожевников, К. Федин, А. Твардовский, Б. Горбатов, Н. Грибачев, А. Венцлова, А. Упит, А. Якобсон, Якуб Колас, Г. Леонидзе, И. Эренбург, П. Бровка, Айбек, М. Чиаурели, В. Тренев, К. Воронков, В. Василевская, Е. Поповкин, Б. Лавренёв, Н. Асеев, М. Бубеннов, Н. Зарьян, М. Ибраһимов, Вс. Иванов, Г. Бердынкин, Б. Полевой, В. Луговской, В. Катаев, С. Маршак, А. Первенцев, П. Тычина, М. Рыльский, Д. Соболев, М. Турсун-Заде, С. Евгенов, Б. Ромашов, Н. Погодин, М. Исаковский, А. Караваева, П. Вершигора, Б. Леонтьев, А. Макаров, А. Чаковский, Л. Скорино, Т. Семушкин, С. Вашенцев, М. Гелования, С. Гапцинтова, Б. Андреев, В. Московский, В. Смирнова.

Редактор урынбаҫары Ғ. Н. ЗӘЛНӘРНӘЕВ.

Баймаҡ тау-металлургия техникумы

1951—1952 уҡыу йылының 1-се курсына уҡыусылар ҡабул итә.

Техникумда тау һәм металлургия специальностары бар.

Ул руда ятҡылыҡтарын эшкәртеү буйынса тау техниктарын, ауыр төҫле металдар металлургияһы буйынса техниктар-металлургтар әҙерләй.

Уҡыу срогы 4 йыл.

Техникумға 7 йыллыҡ белеме булған һәм ҡабул итеү һынауҙарын уңышлы тапшырған 14 йәштән алып 30 йәшкә тиклем ике енес кешеһе лә алына. Ҡабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августа тиклем үткәрелә.

Техникумға инеүселәр СССР Конституцияһынан (телдән), рус теленән һәм әҙәбиәтенән (телдән һәм яҙма — диктант), математиканан (телдән һәм яҙма) ҡабул итеү һынауҙары тапшыралар.

Ғаризалар 31 июлгә тиклем ҡабул ителә.

Ғаризалар түбәндәге документтарҙы теркәп техникум директоры исеменә бирелә: белеме тураһында танытма (подлинникта), тыуыуы тураһында танытма (подлинникта) йәки паспорт (инеүсенең үҙе менән алып килергә), автобиография, өс фотокарточка (баш кейемһеҙ башҡа төшерелгән 3Х4 сантиметр күләмендә), хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте тураһында справка, һаулығы тураһында справка, тау-металлургия техникумына инеү өсөн ҡамасаулаусы ауырыуҙарҙың юҡлығы тураһында справка, йәшәгән урынынан справка.

Занятиелар 1 сентябрҙә башлана.

Уҡыуҙа өлгәшеүсе бөтә уҡыусылар айына 285 һумдан алып 390 һумға тиклем стипендия менән тәьмин ителәләр. Отличниктарға стипендия 25 процентҡа артығыраҡ түләнә.

Тау специальносе буйынса уҡыусыларға льгота шарттарында махсус кейем бирелә.

Техникум эргәһендә дөйөм торлаҡ һәм столовой бар.

Техникумдың адресы: Баймаҡ ҡалаһы, тау-металлургия техникумы.

Дирекция.

СТӘРЛЕТАМАК ГОСУДАРСТВО УҠЫТЫУСЫЛАР ИНСТИТУТЫ

1951—1952 уҡыу йылына түбәндәге бүлектәргә студенттар ҡабул итә.

Тарих, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, физика-математика, тәбиғәт һәм география бүлегенә, рус теле һәм әҙәбиәте (уҡытыу рус телендә алып барылмаған һәм рус ете йыллыҡ мәктәптәре өсөн уҡытыусылар айырым әҙерләнә).

Институтҡа урта мәктәпте тамамлаған һәм билдәләнгән һынауҙарҙы уңышлы тапшырған 17 йәштән 35 йәшкә тиклем граждандар ҡабул ителә. Урта мәктәпте алтын һәм көмөш медалдәр менән тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Махсус урта уҡыу йорттарын тамамлаусылар, закон буйынса, 3 йыллыҡ производство стаждары булғанда ғына институтҡа ҡабул ителәләр.

Институтҡа инеүселәр түбәндәге фәндәрҙән һынауҙар бирәләр:

физика-математика бүлегенә инеүселәр: математика, физика, рус теле һәм әҙәбиәте буйынса; тәбиғәт һәм география бүлегенә инеүселәр: химия, рус теле һәм әҙәбиәте, география; тарих бүлегенә инеүселәр: СССР халыҡтары тарихы, география, рус теле һәм әҙәбиәте; тел һәм әҙәбиәт бүлегенә инеүселәр; рус теле һәм әҙәбиәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, СССР халыҡтары тарихы һәм география буйынса.

Институтҡа инеүселәр үҙҙәренең ниндәй специальность буйынса һәм ҡайһы бүлеккә инеүҙәре тураһында ғаризаларында күрһәтергә тейештәр. Ғаризалар 20 июндән 31 июлгә тиклем ҡабул ителә.

Ғаризалар директор исеменә яҙылып, түбәндәге документтар менән тапшырыла: автобиография, урта мәктәпте тамамлау тураһында аттестат (подлинникта), паспорт (уҡырға инеүсенең үҙе тарафынан күрһәтелә), 3 фотокарточка (баш кейемһеҙ, 3Х4 сантиметр күләмдә), хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте тураһында справка.

Ҡабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августа тиклем үткәрелә. Занятиелар 1 сентябрҙә башлана.

Институтҡа ҡабул ителеп тә, 10 сентябрҙән занятиеларға сәбәпһеҙ һуңға ҡалған студенттар институтҡа алынмайҙар.

Студенттар дөйөм нигеҙҙә стипендия һәм мохтаж булғандар дөйөм торлаҡ менән тәьмин ителәләр.

Институттың адресы: Стәрлетамаҡ ҡалаһы, Комсомольская урамы, 73-сө номерлы йорт.

Дирекция.

ӨФӨ БИБЛИОТЕКА ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 уҡыу йылына техникумдың төп һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәренең 1-се курсына уҡыусылар ҡабул итә.

Техникум ҡала һәм балалар библиотекалары өсөн урта квалификациялы специалистар-библиотекарҙар әҙерләй.

Техникумда уҡыу срогы 3 йыл.

Техникумға урта мәктәптең 7 класс күләмендә белеме булған 15 йәштән алып 35 йәшкә тиклем һәр ике енес граждандары ҡабул ителә.

Ҡабул ителеүселәр түбәндәге фәндәр буйынса һынауҙар бирәләр: СССР Конституцияһы, рус теле (телдән һәм яҙма) һәм әҙәбиәте, алгебра (яҙма) һәм геометрия (телдән); башҡорт һәм татар милләтенән булған уҡыусылар әсә теле буйынса (яҙма һәм телдән).

7 йыллыҡ мәктәпте отличноға тамамлаусылар техникумға һынауһыҙ алыналар.

Ғаризалар директор исеменә яҙыла һәм түбәндәге документтар менән бергә тапшырыла: белеме тураһында танытма (подлинникта), тыуған йылы тураһында танытма (подлинникта), йәки паспорт (уҡырға инеүсенең үҙе тарафынан күрһәтелә) 3 фотокарточка (баш кейемһеҙ 3Х4 сантиметр күләмендә), һаулығы тураһында справка; хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте тураһында справка, автобиография.

Ғаризалар 1951 йылдың 16 августына тиклем ҡабул ителәләр. Ҡабул итеү һынауҙары 16 августан 25 августа тиклем үткәрелә.

Уҡыуҙар 1-се сентябрҙән башлана. Һынауҙар ваҡытында райондарҙан килеүсе уҡыусылар өсөн дөйөм торлаҡ бар.

Ҡабул ителгән уҡыусылар һәм яҡшы өлгәшеүселәр стипендия менән тәьмин ителәләр.

Райондарҙан килгән уҡыусылар ай һайын квартира өсөн 30 һум аҡса менән тәьмин ителәсәктәр.

Техникумдың адресы: Өфө ҡалаһы, М. Горький урамы, 43-сө номерлы йорт, библиотека техникумы, телефон 2-81-85.

Дирекция.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П 04338 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

№120(8837)
1951 йыл
20
ИЮНЬ
шаршамбы

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

А. М. ГОРЬКИЙҘЕ ИСКӘ АЛЫУҒА АРНАЛҒАН КИСӘЛӘР (1-се бит).
БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА. **С. Хәлитов.** — Яҡташтар, беҙ һеҙҙең менән (1-се бит).
В. Николаев. — Ижади марксизмдең гениаль әҫәре (2-се бит).
Ш. Бәширов. — Совет законднарын нык һаҡлау өсөн (2-се бит).
РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР (2-се бит).
ИКЕ ТАПҠЫР СОВЕТТӘР СОЮЗЫ ГЕРОЙЫ МУСА ГӘРӘЕВТЕҢ ТЫУҒАН АУЫЛЫНДА БЮСТ ҠУЙЫЛДЫ (3-сө бит).
Р. Хәсәнов. — Яҡшы башланғыс (4-се бит).
И. Абдуллин. — Отош (4-се бит).
Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерләп ҡеңәшмәһе (4-се бит).
СОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

ТӨҘӨЛӨШТӨҢ ЮҒАРЫ СИФАТЫ ӨСӨН КӨРӘШ—ПАРТИЯ ОЙОШМАЛАРЫНЫҢ МӨҺИМ ЭШЕ

Совет хөкүмәте, большевиктәр партияһы һәм личнө иптәш Сталин илебеҙҙә промышленность, ауыл хужалығы һәм культура киң-күләм төҙөлөштәре мәсьәләләренә ғәйәт ҙур әһәмиәт бирә. Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында ҡалаларҙа, эшсе поселкаларында 90 миллион квадрат метр торлаҡ майҙаны ағымға баҫтырылды һәм төҙөлдө.

Промышленносе, социалистик ауыл хужалығы үҫә барған беҙҙең республикабыҙҙа ла киң күләмдә төҙөлеш эштәре алып барыла. Башҡорт АССР-ы урынлашҡан Көньяҡ Уралда «Икенсе Баҡу» тыуҙырылыу, металлургия, станоктар төҙөү, күмер промышленносеның һәм халыҡ хужалығының башҡа тармаҡтарының бығаса күрелмәгән ғәйәт ҙур темптар менән үҫеүе нигеҙендә яңы ҡалалар, эшсе поселкалары барлыҡҡа килде.

Культура кимәле үҫә һәм материаль көн-күреше көндән-көн яҡшыра барған Совет иле хеҙмәтсәндәре төҙөлөш ойошмаларына ҡарата тағы ла ҙурыраҡ талаптар ҡуя. **«Хәҙерге эшсе, совет эшсеһе, — тип өйрәтә иптәш Сталин, — аҙыҡ-түлек менән тәьмин ителеү мәғәнәһендә лә, торлаҡ мәғәнәһендә лә, культура һәм башҡа төрлө кәрәктәрҙе тәьмин итеү мәғәнәһендә лә үҙенең бөтә материаль һәм культура ихтыяждары ҡәнәғәтләндерелгән хәлдә йәшәргә теләй. Уның быға хаҡы бар, һәм беҙ уға был шарттарҙы тәьмин итергә бурыслыбыҙ».**

Республикабыҙҙағы төҙөлөш ойошмалары араһында хеҙмәтсәндәр тураһында сталинсе хәстәрлек күреүҙең яҡшы өлгөләрен күрһәтеүсе коллективтар бик күп. Улар төҙөлөш эштәренең ҡыҫҡа срокта башҡарылыуы, яҡшы сифатлы, арзан булыуы өсөн большевиктарса көрәшәләр. Был төҙөлөш коллективтарының партия ойошмалары төҙәүселәрҙе ижади, инициативалы хеҙмәткә ойоштороусы төп көс булып торалар.

Октябрьский нефтселәре өсөн культура көн-күреш объекттары төҙөү эштәрен алып барыусы икенсе номерлы төҙөлөш управлениеһының партия ойошмаһы бөйөк Сталинға биргән вәғәҙәне намыҫлы үтәү өсөн төҙәүселәрҙе ижади хеҙмәткә күтәрҙе. Бында һәр бер төҙәүсе төҙөлөш эштәрен ни тиклем тиҙерәк һәм сифатлыраҡ башҡарылһа, нефтселәрҙең хеҙмәте шул тиклем етештереүсәнлекле буласаҡ икәнен яҡшы аңлай. Коллектив йыллыҡ планды бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 34 йыллығы көнө — 7 ноябргә үтәү өсөн көрәшә. Управлениеның партия, профсоюз ойошмалары администрация менән берлектә техниканы киң файҙаланыу, эш темпын артабан күтәреү, сифатын яҡшыртыу буйынса ойоштороу-техник саралар планы эшләп сығарҙылар.

Эшселәрҙең массовый социалистик ярышын ойоштороу, алдынғы прогрессив методтарҙы индереү, техниканы киң файҙаланыу — төҙөлөш эштәренең темпын үҫтереү һәм сифатын күтәреүҙә яңы сикләнмәгән мөмкинлектәр аса. Черниковскиҙәге «Башнефтестрой» тресы коллективының эшендәге уңыштарҙы бына шундай мөһим саралар тәьмин иттеләр. Трест партия ойошмаһы социалистик ярыштың башында торып етәкселек итә. Коммунистар производствоның иң яуаплы участкаларына ҡуйылғандар һәм улар үҙҙәренең яҡшы эшләүҙәре менән киң эшселәр массаһына өлгө булып торалар. Ташсылар бригадаһы бригадиры коммунист Малютин, газоэлсварщик коммунист Шакиров, слесарь коммунист Нурғәлиев һәм башҡалар айлыҡ заданиеларҙы систематик 150 — 200 процентҡа үтәйҙәр. Трест коллективының стахановсы хеҙмәте һөҙөмтәһендә 1951 йылдың 5 айы планы торлаҡ йорттарын эксплуатацияға тапшырыу буйынса арттырып үтәлде.

Ләкин бөтә төҙөлөш тресттарының, управлениеларының партия ойошмалары ла заданиеларҙы үтәү, эштең сифатын өсөн большевистик ныҡышмалылыҡ менән көрәшмәйҙәр әле. Республикабыҙҙың башҡалаһы Өфөлә киң күләмдә төҙөлөш эштәре алып барырға саҡырылған «Башстрой» тресы коллективы производство заданиеларын үтәүҙе систематик өҙөп килә. Бай техника тейешенсә файҙаланылмай. Эштең сифаты түбән. Участкаларҙа хеҙмәт дисциплинаһы ла ҡәнәғәтләнерлек түгел. Ләкин төҙөлөштөң партия, профсоюз ойошмалары был тревогалы хәл менән килешеп йәшәйҙәр, производство эштәрен яҡшыртыу өсөн эшселәр массаһының социалистик ярышын эшлекле ойошторамайҙар. ВКП(б)-ның Ленин район комитеты ла тресты артта ҡалыуҙан сығарыу юлында бик аҙ ярҙам итә.

«Магнитстрой» тресының Белорет төҙөлөш монтаж управлениеһы партия ойошмаһы эштең сифаты өсөн көрәш мәсьәләһенә тейешле иғтибарҙы юнәлтмәгән. Быйылғы сезондың үҙған биш айында ғына 2 мең квадрат метрҙан күберәк штукатурка бракҡа сығарылды. Төҙөлөштә механизация ла бик насар ҡулланыла. Күп кенә ауыр эштәр ҡул көсө менән башҡарылып килә. Ә управлениеның партия ойошмаһы эшкә тейешле контроль булдырмаған.

Юғары сифатлы, арзан һәм тиҙ төҙөү өсөн көрәш — бөтә төҙөлөш партия ойошмаларының мөһим бурысы ул. Бөтә төҙөлөш майҙандарында ныҡлы тәртип булдырырға, хеҙмәтте дөрөҫ ойошторорға, алдынғы методтарҙы киң ҡулланырға кәрәк. Черниковск ҡалаһы төҙәүсеһе штукатур иптәш Сычев комплекс методы менән эшләп, хеҙмәт етештереүсәнлеген 2-3 тапҡырға үҫтереүгә өлгәште. Ташсы Диченко һәм башҡа новаторҙарҙың ғүзәл эш өлгөләре бар.

Беҙҙең уңыштарыбыҙҙы дөрөҫ ойоштороған агит-массовый эштәр тәьмин итәләр. Төҙөлөштәрҙәге партия ойошмалары һәр бер эшсене партия йоғонтоһо менән солған алырға, участкаларҙа массовый-сәйәси эштәрен киң йәйелдерергә тейештәр.

Төҙөлөш участкаларында йыш ҡына материалдарҙың насар булыуына, йәки етешмәүенә зарланалар. Был урынлы ла. Бындай күренештәргә юл ҡуймаҫ өсөн төҙөлөш материалдары етештереүсе заводтарҙың, трестарҙың, ярҙамсы предприятиеларҙың үҙ эштәрендә яуаплылыҡтарын күтәрергә кәрәк. Төҙөлөштәрҙә эштең сифаты мәсьәләһендә малярҙарҙың штукатурсыларға, ә штукатурсыларҙың малярҙарға һылтаныуын һәм башҡа шундайҙарҙы йыш ҡына осратырға мөмкин. Бындай хәлдән ҡотолоу өсөн Ҡуйбышев инженеры Скитов, маляр Тутов иптәштәр үҙ-ара контроль яһау методын тәҡдим иттеләр. Был эштә яуаплылыҡты күтәреүгә йүнәлтелгән башланғысты республикабыҙҙағы төҙөлөштәрҙә лә киң ҡулланырға кәрәк.

Тиҙ, яҡшы һәм отлично ғына төҙөргә! Был бөтә коллективтар өсөн боевой бурыс ул. Төҙөлөш партия ойошмалары, ВКП(б)-ның район һәм ҡала комитеттәре төҙөлөш эштәренә етәкселекте көсәйтергә, эш темпын күтәреү, сифатын яҡшыртыу өсөн иң эшлекле саралар күрергә тейештәр.

Совхоз баҫыуҙарында

Республика совхоздары юғары урожай алыу өсөн көрәште киң йәйелдерҙеләр. Дим, Һаҡмар, Инәк, Һәүәнәк һәм Ҡарлыман совхоздарында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү юғары сифатлы итеп башҡарыла.

Дим совхозында 2 мең гектарҙан артыҡ бөртөклө ашлыҡ утауы.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Ижади хеҙмәткә киң юл

Беҙҙең колхозға Ильич нурҙары иңгәнгә күп түгел. Шуға ҡарамаҫтан, уға шул тиклем күнектек, әгәр ҙә төндә электр уты аҙ ғына ваҡыт һүнеп торһа ла, беҙ тынысһыҙлана башлайбыҙ. Хәҙер үк ГЭС-ҡа телефон шалтыратабыҙ. Был әле өйҙә генә шулай. Ә эрелетелгән колхоз хужалығында уның әһәмиәте айырыуса ҙур. Электр энергияһы бит, беҙҙең механик, слесарь, малсылыҡ работниктарына һәм башҡа специалистарға ижади хеҙмәткә сикһеҙ киң юл аса.

Мин механик. Ауыл хужалығы машиналарын, автомашиналарҙы, тракторҙарҙы ремонтлайым. Ҡайһы бер ябай машиналарҙы үҙем дә уйлап сығарам.

Минең етәкселегемдә колхозда ҙур механика мастерскойы төҙөлдө. Ундағы һәр бер станок электр көсө менән хәрәкәткә килә. Теләгән деталде эшләргә, ремонтларға мөмкин. Хәттә унда яңы машиналарҙы ижад итергә лә була. Мин һуңғы йылдарҙа электр ярҙамында эшләй торған сүкеш, ҡатмарлы молотилка, май һығыу заводы, күк-һағыҙ сәскес конструкцияланым. Сүкеш бер киловаттлы электромотор ярҙамында хәрәкәткә килә һәм минутына 80 тапҡыр удар яһай. Удар йыш булғас, әлек ҡыҙған ҡорос үҙенең ҡыҙыулығын оҙаҡ ваҡыт һаҡлай. Уның төп әһәмиәте шунда — ул 8 молотобойщиктең эшен алмаштыра һәм 6 бот таш күмергә экономия яһай.

И. Кушъялов,

Бөрө районы Буденный исемендәге колхоздың механика мастерскойы мөдире.

Стахановсы шишәмбе

Ошо көндәрҙә Башпрофсовет һәм ВКП(б)-ның Ленин райкомы стахановсы шишәмбе үткәрҙе. Унда 200-ҙән артыҡ производство новаторҙары, металды тиҙләтелгән метод менән ҡырҡыу мастерҙәре ҡатнашты. Стахановсы шишәмбелә Березин, Клементьев, Базиновский, Чигвинцев һәм башҡа иптәштәр үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

— Мин, — тине иптәш Базиновский үҙенең сығышында, — тау оборудованиелары заводында токарь булып эшләйем. Үҙебеҙҙең производствоның үҙенсәлеген иҫәпкә алып, мин башҡарыласаҡ эште 5 көн алда алам, чертеждарҙы өйрәнәм, үҙемә эш фронтын тәьмин итәм.

Эшкәртергә ҡалдырылған металды алыуҙа ваҡытты максималь ҡыҫҡартыу, ҡырҡыстарҙы дөрөҫ әҙерләү һәм үткерләү арҡаһында мин станокты тулы ҡеүәтендә файҙаланыуға өлгәштем.

Стахановсы шишәмбелә ҡатнашыусылар металды тиҙләтелгән метод менән ҡырҡыу методтарын эш өҫтөндә өйрәнеү маҡсатында электр оборудованиелары заводының цехында булдылар.

Р. Вәлиев.

Пар ерҙәре культивациялана

Туймазы районы колхоздарында пар һөрөү эштәре нигеҙҙә май айында уҡ тамамланғайны. Ә 10 июнгә план 108 процентҡа үтәлде. «1 Май», «Игенсе», Мичурин исемендәге колхоздар был эште 20 майға уҡ 130—140 процентҡа үтәнеләр.

Хәҙер пар майҙандарын эшкәртеү эше ҡыҙыу бара. Был эштә Бишенде МТС-ы трактористтары айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Мичурин исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән трактор бригадаһы пар ерҙәрен культивациялауҙы тамамланы ла инде.

Өфө яҙыу машиналары заводы эшселәре коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре заказдарын срогынан алда үтәү өсөн көрәшәләр.
Һүрәттә: стахановсы слесарь-йыйыусы А. Ф. Козлов. Ул көндәлек нормаһын 1,5—2 тапҡырға арттырып үтәй.
А. Червинский фотоһы.

Яҡташтар, беҙ һеҙҙең менән

Волга — Дон каналы төҙөлөшөндә эшләүсе ордена Башҡортостан кешеләренең «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы биттәрендә баҫылған патриотик хаттары беҙҙең Сталин исемендәге колхоз члендары тарафынан ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡылды. Республикабыҙ хеҙмәтсәндәренең коммунизмдең бөйөк ҡоролмаһын ижад итеүҙә тураһан-тура ҡатнашыуы колхозсыларҙа ғорурланыу һәм производство активлеге тыуҙырҙы.

Дөрөҫ, беҙҙең колхоздан бер кеше лә Волга — Дон каналында эшләмәй. Ләкин беҙ бөтә коллективыбыҙ суднолар йөрәтеүсе каналды төҙәүсе яҡташтарыбыҙ менән бергә эшләйбеҙ, тип хис итәбеҙ. Ошо тойғо менән рухланған колхозсылар: «Яҡташтар, беҙ һеҙҙең менән», тиҙәр һәм, уларҙың фиҙакәр хеҙмәтенә лайыҡлы яуап бирәләр.

Беҙҙең колхоз, республикабыҙҙың башҡа бик күп ауыл хужалығы артелдәре кеүек үк, ойоштороу-хужалыҡ яғынан йылдан-йыл нығый бара, колхозсыларҙың материаль көн-күреше яҡшыра. Мәҫәлән, хужалыҡтың 1949 йылда 338,6 мең самаһы булған доходы быйтыр 489,5 мең һумға етте. Быйтыр беҙ һәр бер хеҙмәт көнөнә 4,7 килограмм игөн һәм 1 һум 25-әр тин аҡса бирә алдыҡ.

Төҙәүсе яҡташтарыбыҙ алдында бурыслы булып ҡалмау маҡсатында беҙ быйыл юғары урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ. Беҙҙең социалистик йөкләмәбеҙ — бөртөклө культураларҙың һәр гектарынан 16-шар центнер урожай алыуға өлгәшеү. Һүҙебеҙгә тоғро булырбыҙ. Яҙғы сәсеү осорунда быға ныҡлы нигеҙ һалынды. 200 гектарҙан артыҡ бөртөклө культуралар ҡыҫҡа сроктарҙа юғары агротехник кимәлдә сәселде. Сәсеүсе булып эшләүсе колхозсыларҙан И. Фәхретдинов, Х. Ҡорбанаев, прицепщик Ш. Нәфиков һәм башҡа бик күптәр баҫыу эштәре осоронда көндәлек нормаларын 160 процентҡа еткереп эшләнеләр.

Әкбәр Хамитов етәкселегендәге баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу бригадаһының эше төҙәүсе яҡташтарҙың фиҙакәр хеҙмәтенә бына тигән яуап була ала. Академик Лысенко методы буйынса был бригада быйыл 15,5 гектар майҙанда имән, ҡайын, тополь һәм башҡа ағастар ултыртты. Йәш үҫентеләрҙең 96 проценте һаҡланып үҫә. Бындай полосаларҙың дөйөм майҙаны хәҙер 42 гектар тәшкил итә. Бынан тыш, беҙҙә 8 гектар майҙанда емеш-еләк баҡсаһы бар. Уны ла иптәш Ә. Хәлитов етәкселегендәге махсус звенолар тәрбиәләй. Былтыр был баҡсанан 54 мең һумлыҡ доход алынғайны, быйыл уҡ 65 мең һумға еткереләсәк.

Колхоздың малсылыҡ работниктары ла төҙәүсе яҡташтар алдында ҡыҙарырлыҡ түгел. Өс ферма буйынса 1951 йылда мал үрсетеүҙең государство планы арттырып үтәлде лә инде. Ҡошсолоҡ буйынса государство планын үтәүҙе тәьмин итәсәкбеҙ. Һауын һыйырҙарын артабан үрсетеү буйынса ла саралар күрелә.

Ауыл хужалығы артеленең хужалыҡ ҡеүәтен үҫтереүгә бөтә көсөн биреүсе колхозсылар үҙҙәренең намыҫлы хеҙмәт емештәрен күреп шатланалар. Оҙаҡламай беҙҙә электростанция эксплуатацияға тапшырыла, ауылды радиолаштыра башлайбыҙ. Колхоздың автомашиналар паркы тағы ла ике машина менән тулыландырыла. 20 мең һумлыҡ төрлө ауыл хужалығы машиналары алдыҡ. Ошоноң менән бер рәттән, колхозда ҙур күләмдә төҙөлөш эштәре алып барыла.

Төҙәүсе яҡташтар! Тырышып эшләгеҙ. Беҙ һеҙҙән ҡалышмабыҙ.

С. Хәлитов,

Күгәрсен районы Сталин исемендәге колхоз председателе.

Мал аҙыҡтары етештереүҙә МТС-тың ярҙамы

Стәрлетамаҡ районы колхоздары урожай йыйыуҙы башлауға тиклем бесән сабыу һәм силос һалыу пландарын үтәү өсөн көрәшәләр.

Хәҙер колхоздарҙың мал аҙығы туплау бригадалары эште йәйелдерҙеләр. «Красное знамя» һәм Каганович исемендәге колхоздарҙың мал аҙыҡтары туплау бригадалары айырыуса яҡшы эшләйҙәр. «Красное знамя» колхозында ҡул салғыһы менән 70 кеше бесән саба.

Михайловка МТС-ы механизаторҙары мал аҙығы етештереүҙә колхоздарға ҙур ярҙам ойошторҙо. Свердлов исемендәге колхозда МТС көсө менән 130 гектар урынына 147 гектар болондоң бесәне сабылды, 180 тонна силос һалынды, Киров исемендәге колхозда 150 тонна силос һалынды.

А. Клементьев.

Алексей Максимович
Горький иҫтәлеге

А. М. Горькийҙе иҫкә алыуға арналған кисәләр

18 июндә Советтар Союзы халыҡтары совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, коммунизм өсөн ялҡынлы көрәшсе Алексей Максимович Горькийҙың үлеүенә 15 йыл тулыуҙы билдәләнеләр.

Мәскәүҙә Үҙәк культура һәм ял паркында Йәшел театрҙа А. М. Горькийға арналған кисә үткәрелде. Башҡаланың 10 меңдән артығыраҡ хеҙмәтсәне бөйөк рус яҙыусыһының иҫтәлеген хөрмәтләү өсөн килгән.

Кисәне СССР совет яҙыусылары Союзы генеральный секретаренең урынбаҫары К. Симонов асты.

Филология фәндәре докторы В. В. Ермилов инеш һүҙе менән сыҡты.

Кисәлә А. Сафронов, М. Бажан, А. Корнейчук, Б. Романов һәм башҡалар сығыш яһанылар.

Һуңынан башҡаланың искусство мастерҙары ҡатнашлығында ҙур концерт булды. Горькийҙың «Тормош төбөндә», «Егор Булычев һәм башҡалар», «Әсә», «Малайлыҡта», «Васса Железнова» тигән әҫәрҙәренән өҙөктәр башҡарылды.

* * *

Союздар Йортоноң Колонналы залында 18 июндә башҡала профсоюз активының А. М. Горький иҫтәлегенә арналған кисәһе булып үтте. Концертта Ҙур һәм Художестволы академия театрҙарының, Мәскәү государство филармонияһының артистары ҡатнашты.

Башҡаланың музыка общественносе А. М. Горькийҙың үлеүенә 15 йыл тулыуҙы композиторҙарҙың Үҙәк йортонда кисә үткәреү менән билдәләне.

(ТАСС).

Бөйөк рус яҙыусыһы А. М. Горькийҙе иҫкә алыу

Мәскәүҙә, боронғо Кремль стенаһында совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, бөйөк рус яҙыусыһы, коммунизм өсөн ялҡынлы көрәшсе Алексей Максимович Горькийҙың көлө һаҡлана.

А. М. Горькийҙың үлеүенә 15 йыл тулыу көнөндә бында СССР һәм УССР совет яҙыусылары союздарынан делегациялар килде һәм веноктар һалдылар.

(ТАСС).

М. Горькийҙың үлеүенә 15 йыл тулыуға арналған йыйылыш

Өфө. 18 июндә Луначарский исемендәге баҡсала, йәйге театр бинаһында, ҡала хеҙмәтсәндәренең бөйөк рус яҙыусыһы Максим Горькийҙың үлеүенә 15 йыл тулыуға арналған йыйылышы булып үтте.

Иптәш И. В. Сталин етәкселегендә ВКП(б) Үҙәк Комитеты Политбюроһы ҡатнашыусыларҙың көслө ҡул сабыуҙары аҫтында Почетлы президиумға һайланды.

Йыйылышта ҡатнашыусылар Башҡортостан совет яҙыусылары Союзының председателе иптәш Харисовтың бөйөк рус яҙыусыһы Максим Горькийҙың ижады тураһында докладын тыңланылар.

Йыйылыш иптәш Сталинға ҡотлау хаты ҡабул итте.

Республиканың иң яҡшы артистарының көсө менән һуңынан ҙур концерт булды.

Илеш районының Иләкшиде ауылында үҙенең бронзанан эшләнгән бюст ҡуйылыу айҡанлы үткәрелгән митингтә ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев үҙенең яҡташтары алдында сығыш яһай.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ижади марксизмдең гениаль әҫәре

(И. В. Сталиндең „Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре" тигән хеҙмәтенең донъяға сығыуына бер йыл тулыуға ҡарата)

И. В. Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән әҫәре марксизм-ленинизм теорияһына бик ҙур хәҙинә булып тора. Унда ғәйәт ҙур конкрет-тарихи материал дөйөмләштерелгән, марксистик-ленинсе тел ғилеме теорияһы юғары баҫҡысҡа күтәрелгән, тел тураһындағы фәндең мөһим мәсьәләләре тулы асыҡлыҡ һәм тәрәнлек менән эшләнгән, совет тел ғилеменең нигеҙҙәре һалынған. Иптәш Сталин, тел ғилемендә хакимлек итеп килгән, Н. Я. Маррҙың «тел тураһында яңы учение» тип йөрөтелгән фәнгә ҡаршы учениеһының тулыһынса нигеҙлекһеҙ булыуын фаш итеп, был учениеның марксизмға бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булмауын күрһәтте.

Иптәш Сталиндең тел ғилеме буйынса хеҙмәттәрендә марксистик-ленинсе теорияның ҡатмарлы мәсьәләләре хәл ителде, уларҙың бөтә совет фәнен артабан ижади үҫтереү, совет халҡына дошман булған буржуаз идеологияға ҡаршы, догматизмдең, начетничествоның һәм талмудизмдең бөтә һәм һәр төрлө күренештәренә ҡаршы көрәшеү өсөн баһалап бөтөргөһөҙ әһәмиәттәре бар.

* * *

Иптәш Сталин кешеләрҙең аралашыу, фекерҙәрҙе уртаҡлашыу һәм бер-береһен аңлауға өлгәшеү средствоһы, ҡоралы булған телгә сиктән тыш асыҡ һәм марксистик билдәләү бирҙе. Тел, тип күрһәтте ул, общество барлыҡҡа килеүе һәм үҫеүе менән бергә барлыҡҡа килә һәм үҫә. Иптәш Сталин, телдең производство менән тәрән органик бәйләнешен асып, телдән башҡа общественный производствоның һәм общество үҙенең йәшәүе мөмкин түгел, тип күрһәтә. «...Общество өсөн аңлайышлы һәм уның членлары өсөн дөйөм булған телдән башҡа, общество етештереүҙе туҡтата, җимерелә һәм общество булып йәшәүҙән туҡтай. Аралашыу ҡоралы булған тел, ошо мәғәнәлә, бер үк ваҡытта общественың көрәш һәм үҫеш ҡоралы булып тора» (И. Сталин, Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре, 1950 йыл, Госполитиздат, 23-сө бит).

Иптәш Сталин: телде һәм уның закондарын общество тарихы менән, өйрәнелә торған телдең халҡының тарихы менән бәйләп өйрәнгәндә генә аңларға мөмкин, тип өйрәтә. Был ваҡытта телде үҫтереүҙә халыҡ массаларының роло бик нык әйтеп үтелә, телдең ижадсыһы һәм уны йөрөтөүсе булып халыҡ үҙе тора. Иптәш Сталин телдең характерлы билдәләренә тулы анализ яһай. «Билдәле булыуынса, телдә булған бөтә һүҙҙәр барыһы бергә телдең һүҙлек составын тәшкил итә, — тип күрһәтә иптәш Сталин. — Телдең һүҙлек составындағы иң мөһим нәмә — төп һүҙлек фонды, уға бөтә тамыр һүҙҙәр ҙә уның ядроһы булып инәләр. Телдең төп һүҙлек фонды, телдең һүҙлек составына ҡарағанда, байтаҡ тарыраҡ, ләкин ул бик оҙаҡ, быуаттар буйына йәшәй һәм яңы һүҙҙәр яһау өсөн телгә база бирә. Һүҙлек составы телдең торошон сағылдыра: һүҙлек составы ни тиклем байыраҡ һәм күп яҡлыраҡ булһа, тел шул тиклем байыраҡ һәм алға киткәнерәк була». (шунда уҡ, 23-сө бит).

Ләкин һүҙлек составы, иптәш Сталиндең бик матур итеп һүрәтләп әйтеүе буйынса, тел өсөн төҙөлөш материалы ғына булып тора — ул үҙе генә, гәрсә унан башҡа телдең булыуы мөмкин булмаһа ла, телде тәшкил итмәй әле. Телдең грамматикаһы ҡарамағына кискәндән һуң һүҙлек составы бик бөйөк әһәмиәт ҡаҙана. Грамматика һүҙҙәрҙең үҙгәреү ҡағиҙәләрен, һөйләмдә һүҙҙәрҙең ҡушылыу ҡағиҙәләрен билдәләй һәм, шулай итеп, телгә тәҙек һәм мәғәнәле характер бирә. «...Грамматика арҡаһында тел кешенең фекерҙәрен материаль тел рәүешендә кәүҙәләндерергә мөмкинлек ала» (шунда уҡ, 24-се бит). Телдең грамматика төҙөлеше һәм уның төп һүҙлек фонды телдең нигеҙен тәшкил итәләр.

Иптәш Сталин телдең үҫеш закондарын асып бирҙе. Ул, хәҙерге телдең элементтәре бик боронғо замандарҙа, ҡоллоҡ эпохаһында уҡ һалынған, тип күрһәтә. Етештереү көстәренең үҫеүе, яҙмаһың барлыҡҡа килеүе, государствоның тыуыуы, сауҙаның үҫеүе, китап баҫыу становыһының килеп сығыуы, әҙәбиәттең үҫеүе телдәге ҙур үҙгәрештәргә шарт булдылар. Ләкин телдең үҫеүе, марксизмде вульгарлаштырыусылар Н. Я. Марр һәм уның шәкерттәре раҫлағанса, шартлауҙар һәм йәшәп килгән телдең бөтөрөлөүе юлы менән түгел, бәлки йәшәп килгән телдең төп элементтәрен йәйелдереү һәм камиллаштереү юлы менән барған. «Марксизм, телдең иҫке сифаттан яңы сифатҡа күсеүе шартлау юлы менән түгел, йәшәп килгән телде юҡҡа сығарыу һәм яңы тел барлыҡҡа килеү юлы менән түгел, бәлки яңы сифат элементтәренең аҡрынлап туплана барыу юлы менән, тимәк, иҫке сифат элементтәренең аҡрынлап үлә барыу юлы менән бара, тип иҫәпләй» (шунда уҡ, 28-се бит).

Иптәш Сталин, Н. Я. Маррҙың: тел — өҫҡормә ул тигән положениеһенең фәнгә ҡаршы булыуын фаш итә. Өҫҡормә — бер эпоханың продукты ул, уның барлыҡҡа сығышына ошо экономик базис йәшәй һәм хәрәкәт итә, тип күрһәтә ул. Өҫҡормәнән айырмалы рәүештә, телде ниндәй ҙә булһа бер эпоханың продукты тип ҡарап булмай. Телдең структураһы, уның грамматика төҙөлеше һәм төп һүҙлек фонды — күп эпохаларҙың продукты ул. Пушкин заманынан алып Россияла феодаль һәм капиталистик ҡоролоштар юҡ ителде һәм яңы, социалистик ҡоролош урынлаштырылды, феодаль һәм капиталистик базистар, феодаль һәм капиталистик өҫҡормә бөтөрөлдө. Ләкин рус теле был ваҡыт эсендә үҙенең структураһы буйынса аҙ үҙгәрҙе.

Иптәш Сталин Н. Я. Маррҙың телдең синфилеге тураһындағы марксизмға ҡаршы положениеһын да емергес тәнҡиткә алды. Ул, телде культура менән бутарға ярамай, уның буржуаз һәм социалистик булыуы ла мөмкин, тип күрһәтте. Кешеләрҙең аралашыу средствоһы булған тел иһә һәр ваҡыт дөйөм халыҡтыҡы була. Ул общественың бөтә синыфтарын, буржуаз һәм социалистик культураны хеҙмәтләндерә. Әгәр ҙә культура үҙенең йөкмәткеһе буйынса общество үҫешенең һәр бер яңы осоронда үҙгәрһә, тел иһә бер нисә осор буйына нигеҙҙә шул уҡ тел булып ҡала. Ул яңы культураны ла, шулай уҡ иҫке культураны ла берҙәй уҡ хеҙмәтләндерә.

Иптәш Сталин, Н. Я. Маррҙың вульгар-материалистик «тел тураһында яңы учение»һен фаш итеп, тел тураһындағы фәндең ҡатмарлы мәсьәләләрен эшләп, был фән работниктәре араһында хакимлек итеп килгән иң киткес буталсыҡты бөтөрҙө һәм тел тураһында, ысын марксистик совет фәненә нигеҙ һалды.

Иптәш Сталин совет тел ғилемен яҡшыртыуҙың конкрет юлдарын — «тел ғилемендәге Аракчеев режимын бөтөрөү, Н. Я. Марр хаталарынан баш тартыу, тел ғилеменә марксизм индереү» бурыстарын күрһәтте.

Иптәш Сталиндең был күрһәтмәләренең тел ғилеме өсөн генә түгел, бәлки фәндең бөтә тармаҡтары өсөн дә ғәйәт ҙур әһәмиәте бар. Был сталинсе положениеларға таянып, совет фәне деятелдәре большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит нигеҙендә мөһим фәнни проблемаларҙы ижади тикшереүҙә, марксизмде вульгарлаштырыуға ҡаршы көрәштә йәйелдерәләр, фәндең артабан сәскә атыуы, коммунизм өсөн көрәштә уның роленең көсәйеүе өсөн был тәнҡиттең әһәмиәте ғәйәт ҙур.

* * *

Иптәш Сталиндең тел ғилеме буйынса хеҙмәттәрендә диалектик һәм тарихи материализмдең күп кенә ҡатмарлы мәсьәләләре ғәҙәттән тыш асыҡлыҡ һәм тәрәнлек менән хәл ителгән.

Иптәш Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән хеҙмәте донъяға сыҡҡанға тиклем беҙҙең философик, экономик һәм тарихи әҙәбиәттә базис һәм өҫҡормә мәсьәләләре асылда эшләнмәгәйне. Ғәҙәттә базисте производство менән тиңләштерә инеләр. Политик, хоҡуҡи, дини, художестволы һәм философик ҡараштар ғына түгел, бәлки общественный аңдың бөтә формалары ла өҫҡормә категорияһына индерелә ине.

Иптәш Сталиндең тел ғилеме буйынса хеҙмәттәре бындай ябайлаштырыуҙарға сик ҡуя. Иптәш Сталин базис һәм өҫҡорманы классик рәүештә билдәләй: «Базис общественың уның үҫешендәге билдәле бер этабындағы экономик ҡоролошо ул. Өҫҡормә — общественың политик, хоҡуҡи, дини, художестволы, философик ҡараштары һәм уның шул ҡараштарға ярашлы политик, хоҡуҡи һәм башҡа учреждениелары» (шунда уҡ, 5-се бит).

Иптәш Сталин өҫҡормаға ҡарата базистең хәл иткес ролен күрһәтә. Һәр бер базистең үҙенә ярашлы өҫҡормаһы була. Базис үҙгәреү һәм бөтөү менән унан өҫтән торған өҫҡормә лә үҙгәрә һәм бөтә. Яңы базис тыуыу менән уға ярашлы өҫҡормә тыуа. Мәҫәлән, феодаль базис бөтөү менән феодаль өҫҡормә лә бөтөрөлдө, СССР-ҙа капиталистик базис бөтөрөлөү менән иҫке капиталистик өҫҡормә лә бөтөрөлдө һәм яңы, социалистик өҫҡормә булдырылды. Иптәш Сталин үҙенең «Диалектик һәм тарихи материализм тураһында» тигән хеҙмәтендә общество үҫешендә алдынғы идеяларҙың мобилизациялаусы, ойоштороусы һәм үҙгәртеп ҡороусы бөйөк ролен күрһәтте. Иптәш Сталин үҙенең тел ғилеме буйынса хеҙмәттәрендә, марксизм-ленинизмде үҫтереп, өҫҡорманың бөйөк ролен асыҡ һәм ышандырырлыҡ итеп күрһәтә, өҫҡормә «...үҙенең базисына формалашырға һәм ныҡынырға актив ярҙам итә, иҫке базисте һәм иҫке синыфтарҙы тамам ҡалдан тайҙырыуҙа һәм бөтөрөүҙә яңы ҡоролошҡа ярҙам итеү өсөн бөтә сараларҙы күрә» (шунда уҡ, 7-се бит).

Иптәш Сталиндең базис һәм өҫҡормә тураһындағы положениелары беҙгә совет общестоһының һәм Совет государствоһының төп етәксе һәм юналеш биреүсе көсе, социализм һәм коммунизм төҙөүҙең төп ҡоралы булған большевиктар партияһының бөйөк ижади ролен тәрәнерәк аңларға мөмкинлек бирә.

Социалистик общество шарттарында иҫке сифат хәленән яңы сифат хәленә шартлауҙарһыҙ күсеү законы тураһындағы иптәш Сталин тарафынан күрһәтелгән положениеларҙың ғәйәт ҙур әһәмиәте бар. Иптәш Сталин марксистик әҙәбиәттә беренсе булып социалистик общество үҫешенең яңы закондарын асты, улар антагонистик синыфтарға бүленгән общественың закондарынан принципиаль айырылалар. Иҫке сифаттан яңы сифатҡа шартлауҙар юлы менән күсеү закон, тип күрһәтә иптәш Сталин, дошман синыфтарға бүленгән общество өсөн мотлаҡ кәрәк. Ләкин дошман синыфтары булмаған социалистик общество өсөн был закон бөтөнләй мәжбүри түгел. Социалистик общество шарттарында иҫке сифат хәленән яңы сифат хәленә күсеү, яңы сифат элементтәренең аҡрынлап тупланыуы һәм иҫке сифат элементтәренең үлеп бөтөүе юлы менән башҡарыла, ә шартлауҙар юлы менән түгел.

Шартлауҙарһыҙ һикереш тураһындағы сталинсе положение социализмдан коммунизмға күсеү закондарын асып бирә. СССР-ҙа коммунизм төҙөү производство, фән һәм техника өлкәһендәге һикерешле революцион үҙгәрештәр менән бәйләнгән. Коммунизмдең Волгалағы, Дондағы, Днепрҙағы, Ҡырымдағы һәм Төркмәнстандағы бөйөк төҙөлөштәре бындай һикерештәрҙең асыҡ миҫалы булып тора. Производствоға атом энергияһын киң индереү етештереү көстәрен үҫтереүҙә грандиоз һикереш буласаҡ. Ләкин был һикерештәр шартлауҙарҙы, йәшәп килгән производство мөнәсәбәттәрен бөтөрөүҙе аңлатмаясаҡтар. Был һикерештәр совет халҡын коммунизм төҙөүгә мобилизациялаусы Совет государствоһы тарафынан ойошторола һәм ғәмәлгә ашырыла һәм улар социалистик производство мөнәсәбәттәрен артабан нығытыуға килтерәсәктәр.

Иптәш Сталиндең тел ғилеме буйынса хеҙмәттәре беҙҙең фәнгә ижади яҡын килеүгә һәм начетничествоға, талмудизмға һәм догматизмға ҡаршы килешмәүсән көрәш алып барыуға өйрәтәләр. В. И. Ленин, марксизм — догма түгел, о эш итеүгә ҡулланма ул, тип яҙҙы. Иптәш Сталин үҙенең яңы хеҙмәттәрендә марксизмға начетниктарса, талмудистарса яҡын килеүҙе, марксизмдең билдәле бер тарихи осор өсөн дөрөҫ булған положениеларын, үҫештең бөтә осорҙары өсөн яраҡлы догмаларға әүерелдерергә маташыуҙарҙы ҙур көс менән фаш итә.

Мәҫәлән, Ф. Энгельс үҙенең «Антидюринг» тигән хеҙмәтендә социалистик революция еңгәндән һуң государствоның бөтөүе тураһында һығымтаға килеүе билдәле.

«Ләкин совет марксистары, — ти иптәш Сталин, — беҙҙең замандағы донъя обстановкаһын өйрәнеү нигеҙендә, бындай һығымтаға килделәр, капиталистик ҡамалыш бар ваҡытта, социалистик революция әле тик бер илдә генә еңеп, ә бөтә башҡа илдәрҙә капитализм хакимлек иткән ваҡытта, еңгән революция иле, үҙ государствоһын, государство органдарын, разведка органдарын, армияһын йомшартмасҡа, ә бөтә саралар менән көсәйтергә тейеш, әгәр ҙә был ил капиталистик ҡамалыш тарафынан тар-мар ителергә теләмәһә, ул быларҙы эшләргә тейеш» (шунда уҡ, 50-се бит).

Начетниктарҙың һәм талмудистарҙың, тип күрһәтә иптәш Сталин, ...формулаларҙың береһен һис шикһеҙ хата тип алып ташларға, ә икенсеһен, һис шикһеҙ дөрөҫ булғанын, — социалистик государство үҫешенең бөтә осорҙарына таратырға кәрәк, тип әйтеүҙәре мөмкин.

Ләкин марксистар был формулаларҙың икеһенең дә дөрөҫ булыуын беләләр. Энгельс формулаһы социализмдең тамам еңеү осоро өсөн һәм иптәш Сталиндең формулаһы социализмдең бер йәки бер нисә илдә еңеүе осоро өсөн дөрөҫ.

Иптәш Сталин, телдәрҙең ҡушылыуы тураһындағы мәсьәлә буйынса начетниктарҙы һәм талмудистарҙы фаш итеп, былай тип күрһәтә: социализм бөтә донъя масштабында еңгәндән һуң, «...милләттәрҙең ҡаҡ ваҡыт экономик, политик һәм культура хеҙмәттәшлеге һөҙөмтәһендә, ул телдәрҙән башта иң байытылған берҙәм зональ телдәр айырылып сығасаҡ, ә аҙаҡтан зональ телдәр дөйөм бер халыҡ-ара телгә ҡушыласаҡ, ул тел, әлбиттә, немец теле лә, рус теле лә, инглиз теле лә булмаҫ, ә милли һәм зональ телдәрҙең иң яҡшы элементтәрен эсенә алған яңы тел булыр» (шунда уҡ, 54-се бит).

Марксизмдә «бер ваҡытта ла» үҙгәрмәүсе догматтар йыйылмаһы тип ҡарауҙы һәм уларҙы ятлап, был догмаларҙы бөтә эпохаларға, тормоштоң бөтә ваҡиғаларына ҡулланып, бөтә мәсьәләләрҙе дөрөҫ хәл итергә мөмкин тип иҫәпләүсе начетниктарҙы һәм талмудистарҙы тәнҡитләп, иптәш Сталин марксизмде классик рәүештә билдәләй:

«Марксизм — тәбиғәттең һәм общественың үҫеш закондары тураһындағы фән, иҙелгән һәм эксплуатацияланған массаларҙың революцияһы тураһындағы фән, социализмдең бөтә илдәрҙә еңеүе тураһындағы фән, коммунистик общество төҙөү тураһындағы фән ул. Марксизм фән булыу яғынан, бер урында тороп ҡала алмай, — ул үҫә һәм камиллаша бара... Марксизм бөтә эпохалар һәм осорҙар өсөн мәжбүри булған үҙгәрешһеҙ һығымталарҙы һәм формулаларҙы танымай. Марксизм — һәр төрлө догматизмдең дошманы ул». (шунда уҡ, 54—55-се биттәр).

* * *

Иптәш Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән, совет фәнен үҫтереүҙең артабанғы юлын билдәләүсе гениаль әҫәре совет халҡын общественый үҫеш закондарын тағы ла тәрәнерәк аңлау менән ҡоралландырға, уны коммунизм төҙөү өсөн фиҙакәр хеҙмәткә мобилизациялай. Ике лагерь — СССР етәкселек иткән тыныслыҡ лагеры менән башында Америка империалистары торған һуғыш лагере араһындағы аяуһыҙ көрәш шарттарында иптәш Сталиндең тел ғилеме буйынса хеҙмәттәре бөтә илдәрҙең алдынғы кешеләренә капиталистик системаның үлемгә хөкөм ителгәнлеген һәм тыныслыҡ, демократия һәм социализм өсөн көрәшеүсе көстәрҙең еңелмәҫлеген тәрәнерәк аңлауға ярҙам итә.

В. Николаев.

СОВЕТ ЗАКОНДАРЫН НЫҠ ҺАҠЛАУ ӨСӨН

20 июнда Өфөлә Башҡортостандың район һәм ҡала прокурорҙарының республика кәңәшмәһе асыла. Кәңәшмәлә Башҡорт АССР-ы прокуратураһы органдары эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу буйынса бурыстар тураһында Башҡорт АССР-ының прокуроры, III класс юстицияның государство советнигы иптәш Гусевтең докладлы тикшерелә.

Прокурорҙарҙың республика кәңәшмәһе ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетенең күптән түгел генә тамамланған пленумынан һуң йыйнала. Өлком пленумы Совет Башҡортостанына партия һәм хөкүмәт тарафынан ҡуйылған пауботтағы бурыстарҙы хәл итеүҙә боевой программа табып итте.

Башҡортостан прокуратураһы работниктәренең бурысы партия Өлкә Комитеты тарафынан билдәләнелгән боевой программаны уңышлы үтәүҙә оператив, үҙенең хеҙмәт бурысын намыҫлы үтәү һәм инициатива күрһәтеү юлы менән бөтә төр ярҙамды күрһәтеүҙән тора.

Беҙҙең республика кәңәшмәһенең төп бурысы, өлгәшелгән уңыштарҙы иҫәпләүҙән түгел, ә сериоз етешһеҙлектәрҙе асыуҙан тора. Беҙ партияның, коммунистик общественың төҙөүҙә тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит төп хәрәкәт иттергес көс булып тора, тигән күрһәтмәһен хәтерҙә тоторға тейешбеҙ.

Государство беҙгә бик үткер ҡорал тапшырған, ул ҡорал менән дошмандарҙы, государство һәм колхоз милкен туҙҙырыусыларҙы, әрәм-шәрәм итеүселәрҙе, хулигандарҙы, спекулянттарҙы һәм коммунистик общество төҙөүгә ҡамасаулыҡ итеүсе бөтә кешеләрҙе рәхимһеҙ ҡыйратып, ҡыйыу һәм ҡырҡа хәрәкәт итергә кәрәк.

Закондарҙы боҙоуға иғтибар бирмәүсе, улар менән килешеп йәшәүсе прокурорҙар әле булһа бар. Етешһеҙлектәрҙе бик һуңлап асыусы, асылда, тик фактарҙы теркәүсегә әйләнеүсе, ғәйепле кешеләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыуҙа тейешле ҡыйыулыҡ күрһәтмәүсе прокурорҙар ҙа бар әле.

Бәйрәкәй районы прокуроры Кубицкий законлылыҡты боҙоу фактарына принципһеҙ, килешеп ҡараусы прокурорҙың береһе булып тора. Ул, прокурор булараҡ, районда закондарҙы боҙоуҙың күп кенә фактарына иғтибар бирмәгән, социалистик милкте талаусыларға һәм әрәм-шәрәм итеүселәргә ҡаршы бөтөнләй көрәш алып бармаған.

Учалы районы прокуроры Ҡотлобирҙин, Хәйбулла районы прокуроры Таһиров, Әлшәй районы прокуроры Балғазин, Нуриман районы прокуроры Әзмәтов, Шишмә районы прокуроры Юнусов иптәштәр һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың прокурорҙары государственный һәм общественный милкте әрәм-шәрәм итеүселәргә ҡаршы тәнҡитләнерлек көрәшмәйҙәр.

Покровка районында былтыр айырым хеҙмәт кешеләре күҙ буяусанлыҡҡа юл ҡуйғандар, был күҙ буяусанлыҡ шунан тора: юғары органдарға ебәргән сводкаларҙа улар урожай йыйыуҙы тамамлау тураһында хәбәр итәләр, ә фактик алғанда, йыйылмаған урожай ҡамырға килеп ҡар аҫтында ҡалған. Был район прокуроры иптәш Плетенев был мәсьәләлә принципиаллек күрһәтмәгән, һөҙөмтәлә күҙ буяусанлыҡ фактары бының ҡай айында ғына асылды.

Кушнаренко районында «Заготзерно» әҙерләтелгән пунктының директоры Юшин систематик әскелек менән шөғөлләнгән һәм яңы урожай игенен ҡабул итеүгә бина әҙерләү мәсьәләләре менән бөтөнләй шөғөлләнмәгән, иген складтарын төҙәүҙе өҙгән.

Район прокуроры иптәш Хәлимуллин бындай иң киткес фактан ситтә ҡалған. Хәҙерге ваҡытта республика прокуратураһы Юшинде уголовный яуаплылыҡҡа тарттырҙы.

Прокуратура аппараты эштә аныҡлыҡ, бирелгән бурысты тиҙ үтәү һәм оперативлек менән айырылырға тейеш. Тикшереү органдары өсөн енәйәттәрҙе тикшереүҙе оҙаҡҡа һуҙыу ваҡиғалары сыҙап торғоһоҙ хәл ул.

Совет кешеләренең хоҡуҡтарын бер нисек тә боҙоуға юл ҡуймайынса, социалистик законлылыҡты һаҡлау — прокуратура работниктәренең иңге бурысы.

«Беҙ, — тине М. И. Калинин, — прокурорҙан эште ошолай ҡуйыуҙы, социалистик законлылыҡ өсөн көрәште ошолай ойоштороуҙы талап итәбеҙ, был ваҡытта һәр бер эшсе, һәр бер колхозсы, һәр бер совет учреждениеһы бюрократик боҙоуҙарҙан гарантияланырға тейеш, был ваҡытта һәр бер кеше үҙенең законлы хоҡуҡтарының һәм интерестарының һаҡланыуына, был интерестарҙы һаҡлауҙа Совет власы тарафынан ҡуйылған махсус прокурорҙар барлығына ышанырға тейеш».

Прокуратураның ҡайһы бер работниктәре бюрократизмға һәм волокитаға ҡаршы көрәш буйынса прокурор күҙәтеүенең мөһим бурыстарын тормошҡа ашырмауына түгел, бәлки үҙҙәре хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын хәл итеүгә йәнһеҙ, бюрократтарса мөнәсәбәт итеүгә юл ҡуялар.

Благовар районы прокуратураһына гражданка Хәйруллинанан законһыҙ тентеү үткәреү һәм аҡса алып китеү тураһында жалоба килгән. Хәҙер эшенән алынған район прокурорының вазифаһын үтәүсе Исламғолов тикшереү үткәрмәйенсә, ауыл Советы председателе Ахуновҡа бындай фактарҙы артабан ҡабатламауҙы һорап хат ебәреү менән сикләнеп, жалобаны нарядҡа яҙып ҡына ҡуйған.

Краснокама районының прокуроры Ҡорбанов һәм Мишка районының прокуроры Шамыкаев иптәштәр хеҙмәтсәндәрҙән килгән жалобаларҙы хәл итеүҙә иң киткес волокитасылыҡҡа һәм бюрократизмға юл ҡуялар.

Туранан-тура әйтергә кәрәк, республика прокуратураһының аппараты үҙ эшен бик аҡрын үҙгәртеп тора әле, эштә тейешле талапсанлыҡ һәм оперативлек етешмәй, был, артабан сыҙап торғоһоҙ хәл.

Прокуратура органдарының закондарҙы аныҡ һаҡлау эшен көсәйтеүҙе ысынлап та оператив һәм бөтә яҡлап ойоштороу, енәйәтселеккә ҡаршы эшлекле көрәш талап ителә. Прокуратура органдары закондарҙы үтәүҙе, урожай йыйыу һәм ауыл хужалығы продукттарын әҙерләү тураһында партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарын үтәүҙе тәьмин итергә тейештәр. Улар урожайҙы юғалтыуға, игенде боҙоуға, урлауға ҡаршы, государствоға дошманлыҡ практикаһына ҡаршы һәм иген әҙерләү осорондағы саботажлыҡ элементтарға ҡаршы рәхимһеҙ көрәш алып барырға бурыслылар.

Социалистик милкка бөтә төр ҡул һуҙыуҙарға ҡаршы ҡырҡа көрәш прокуратура работниктәренең иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Общество милкен әрәм-шәрәм итеүселәргә, жуликтарға, ҡараҡтарға ҡаршы көрәш алып барырға кәрәк. Государствоға һәм халыҡҡа ҡаршы яһалған бер генә енәйәт өсөн дә яза бирмәйенсә ҡалдырырға ярамай.

Промышленноста, совхоздарҙа, МТС-тарҙа һәм колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһын боҙоуҙарға ҡаршы көрәште көсәйтеү, шулай уҡ прокуратураның бурысы булып тора. Граждандарҙың хоҡуҡтарын, бигерәк тә Ватан һуғышы инвалидтарының, совет армияһының һуғышта һәләк булған воиндәре семьялары һәм хәрби хеҙмәткәрҙәр семьялары членларының хоҡуҡтарын яҡлауҙы бөтә яҡлап тәьмин итергә кәрәк.

Государствоға ҡаршы практиканың төрлө күренештәренә, государство дисциплинаһын бөтә төр боҙоуҙарға ҡаршы ҡырҡа көрәш, шулай уҡ законлылыҡты нығытыу эшендә мөһим бурыс булып тора.

Прокуратура работниктәре ауыл хужалығы артеленең сталинса Уставын нык һаҡлау өсөн бөтә яуаплылыҡты иҫәпкә алырға һәм Уставты боҙоусыларға ҡаршы, колхоз ерҙәрен законһыҙ алырға маташыуҙарға ҡаршы һәм колхоз милкен әрәм-шәрәм итеүселәргә, колхоз демократияһын боҙоусыларға ҡаршы тайпылышһыҙ көрәшергә тейештәр.

Бөйөк большевиктар партияһы етәкселегендә прокуратура органдары социалистик законлылыҡты һәм совет хоҡуҡтарының тәртибен артабан нығытыу буйынса яңы яуаплы бурыстарҙы уңышлы үтәйәсәктәр.

Ш. Баширов,
Башҡорт АССР-ы прокурорының урынбаҫары, юстиция советнигы.

Хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларына иғтибарлы мөнәсәбәт итергә

Урындағы Советтарҙы хеҙмәтсәндәр үҙҙәренең иң яҡын һәм туған органдары итеп иҫәпләйҙәр. Шуның өсөн Советтарға көн һайын тиҫтәләгән хеҙмәтсәндәр үҙҙәренең һорауҙары, теләктәре менән мөрәжәғәт итәләр.

Беҙ, Шафран поселка Советы исполкомының работниктәре, хеҙмәтсәндәрҙең һорауҙарына һәм жалобаларына мөмкин тиклем тулы яуап бирергә, уларҙың теләктәрен ҡәнәғәтләндерергә тырышабыҙ. Килгән кешеләрҙе ҡабул итеү сәғәттәре билдәләнелгән. Шуның өсөн хеҙмәтсәндәр үҙҙәренең йомоштарын теләгән ваҡытта килеп хәл итә алалар.

Район үҙәгенән алыҫ торған ауыл йәки поселка Советында был эш бер аҙ ҡатмарлаша. Сөнки хеҙмәтсәндәрҙең бөтә һорауҙарын хәл итеү ауыл йәки поселка Советтарына ғына бәйләнмәгән, уларҙың күптәрен район ойошмаларында хәл итергә тура килә. Бындай ваҡиғаларҙа беҙ юғары ойошмаларға һылтанып ҡына ҡалмайбыҙ, ә эште үҙ ҡулыбыҙға алабыҙ.

Мәҫәлән, былйыл район финанс бүлеге беҙҙең Совет территорияһында йәшәгән күп кенә хужалыҡтарға подоходный налогты дөрөҫ һалмаған, һәм хеҙмәтсәндәр был турала жалоба менән поселка Советына мөрәжәғәт иттеләр. Беҙ уларға ғаризалар яҙыуға ярҙам иттек һәм поселка Советында тикшереп, ниндәй һөҙөмтәгә килеү тураһында ошо ғаризаға билдә яһағандан һуң, уларҙы район финанс бүлегенә үҙебеҙ барып хәл иттек. Бирелгән ғаризалар һәм жалобаларҙың нисек хәл ителеүе тураһында жалоба биреүсегә үҙ ваҡытында яуап бирәбеҙ. Былай эшләгәндә, мәсьәләне тиҙерәк хәл итергә мөмкин һәм жалоба йәки ғариза биреүселәргә бер нисә тапҡыр район ойошмаларына барып йөрергә лә тура килмәй.

Беҙҙең поселка Советына советтан үҙ территорияһында йәшәүсе хеҙмәтсәндәрҙән генә түгел, башҡа республикаларҙың хеҙмәтсәндәренән дә ғаризалар, хаттар килеп тора. Бына, Полтава өлкәһенән гражданка Соловьева, Свердловск ҡалаһынан гражданка Печетовалар беҙҙә уларҙың туғандары нисек йәшәүҙәре тураһында һорап хат менән мөрәжәғәт иткәйнеләр. Беҙ уларға шунда уҡ тулы яуап бирҙек.

Беҙҙә йыш ҡына семья тормошона, хужалыҡ һәм хеҙмәткә ҡағылған мәсьәләләр буйынса мөрәжәғәт итәләр. Бындай ваҡытта күбеһенсә, мәсьәләне урында барып тикшереп хәл итергә тура килә һәм беҙ шулай эшләйбеҙ ҙә.

Ш. Ямгуров,
Олҡай районы Шафран поселка Советы исполкомының секретары.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Колхоздарҙа төҙөлөш эштәренә иғтибарҙы көсәйтергә

Балтач районы колхоздарының эшләтеүе менән уларҙа даими төҙөү бригадалары ойошторолдо. Бындай бригадаларҙың һәр береһенә 15—22 колхозсы беркетелгән.

Быйыл район колхоздарында 13 кирбес заводы төҙөләсәк. Уларҙа сезонға 1,3 миллион дана кирбес етештереләсәк. Быларҙан тыш, фермаларҙа малдар өсөн бик күп торлаҡтар төҙөлергә тейеш. Шулай уҡ фермаларҙа иҫке торлаҡтарға капиталь һәм ағымдағы ремонт эштәре үткәреләсәк. 25 урында сушилка, 40 урында ашлыҡ киптереү эшләнәсәк. Күп кенә колхоздар быйыл яңы клубтар төҙөүҙе планлаштырҙылар.

Был ҙур эш, әлбиттә. Төҙөү пландарын тулыһынса үтәүҙе тәьмин итеү өсөн төҙөү материалдары әҙерләнә. Мәҫәлән, «Правда» колхозында 700 кубометр, Сталин һәм Жданов исемендәге колхоздарҙа 300—330 кубометр ағас әҙерләнде.

Ләкин райондың башҡа бик күп колхоздарында төҙөү эштәренә тейешле иғтибар бирелмәй.

Районда төҙөлөштәр өсөн бөтәһе 50 мең кубометрҙан күберәк ағас һәм 30 мең кубометр башҡа төрлө материалдар талап ителә. Ләкин уның ни бары 44 проценты ғына әҙерләнгән. Молотов, Карл Маркс, Ленин исемендәге һәм башҡа колхоздарҙа бөгөнгө көнгә тиклем төҙөлөш материалдары әҙерләнмәгән.

Үҙған йылдың октябрь, ноябрь айҙарында Балтач районы етәкселәре ағас материалдары әҙерләү һәм колхоздар өсөн төҙөлөш проекттары булдырыу буйынса БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге урман хужалығы управлениеһына мөрәжәғәт иткәйнеләр. Ләкин бер төрлө лә проект ебәрелмәне. 50 мең кубометр урынына 6 мең кубометр төҙөлөш материалы алырға рөхсәт ителде. Ул да 100—110 километр алыҫлыҡтағы Аҫҡын лесхозынан бирелгән. Ә Балтач районындағы урмандар башҡа райондарҙың колхоздарына рөхсәт ителгән. Шуның арҡаһында райондың ҡайһы бер колхоздары төҙөлөш материалдарын ваҡытында әҙерләмәйҙәр.

Төҙөлөш бригадалары өсөн ҡорал-инструменттар ҙа етешмәй. Инструменттар менән Ә райпотребсоюз колхоздарҙың төҙөү бригадаларының талаптарын тәьмин итмәй.

Т. Хәмитов,
Балтач район Советы исполкомының ауыл-колхоз төҙөлөше бүлегенең техник-десятнигы.

Башҡорт телендә агитацион-массовый эш алып барылмай

Черниковск фанера комбинатында эшләүсе башҡорт һәм татарҙар байтаҡ һанда. Уларҙың үҙ телендә агитацион-массовый эш алып барыу комбинатта ҙур әһәмиәткә эйә. Ләкин, комбинат етәкселәре араһында башҡорт һәм татар телендә агитацион-массовый эш алып барыу тураһында хәстәрлек күреүсе кеше юҡ.

Фанера комбинатының ҡыҙыл мөйөшө бар. Унда күп кенә газета-журналдар алдырыла. Ләкин башҡорт һәм татар телендә баҫылған газета-журналдар табып булмай. Газета таратыу эше бөтөнләй юҡ.

Ш. Вәлиәхмәтов,
Черниковск фанера комбинаты эшсеһе.

Газеталар подписчиктарға үҙ ваҡытында еткерелһен

Яңы Байрамғол почта бүлексәһе менән Миндәк почта бүлексәһенең араһы 20 километр. Яңы Байрамғолдан ҡабат Миндәккә урап ҡайтыу өсөн 40 километр була. Миндәк почта бүлексәһенең начальнигы ошо арала почта йөрөтөү өсөн ни бары бер ат бүлеү тураһында «Большевик» колхозы менән договор төҙөгән.

Билдәле, бер ат һәр көн һайын 40 километр араны йөрөй алмай, һәм уны ике-өс көнгә бер тапҡыр ғына ебәрә. Шуның өсөн дә Миндәктә подписчиктар өлкә газеталарын бик һуңлап, 7-8 көн үткәс ҡына 4-5 номерен бергә алалар.

Подписчиктар был мөһим мәсьәлә менән Учалы район Советы исполкомының ҡыҙыҡһыныуын һәм газеталарҙы подписчиктарға үҙ ваҡытында еткереүҙе талап итәләр.

Р. Әхмәтьянов,
Учалы районы, Яңы Байрамғол почта бүлексәһе начальнигы.

„Ҡыҙыл Башҡортостан"
материалдары буйынса

„Хеҙмәтсәндәрҙең хаттарына яуапһыҙ ҡараш"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 2 июнь номерында Хәйбулла район прокуратураһы работниктәренең хеҙмәтсәндәрҙең хаттарына һәм жалобаларына яуапһыҙ ҡарауҙары тураһында хәбәр баҫылғайны.

ВКП(б)-ның Хәйбулла район комитетенең редакцияға белдереүенсә, был хәбәр бюро ултырышында ҡуйып тикшерелгән. ВКП(б) район комитеты бюроһы хәбәрҙә күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бик урынлы тип тапты. Хеҙмәтсәндәрҙең сигналдарына яуапһыҙ ҡарағаны өсөн район прокуроры вазифаһын үтәүсе иптәш Ниғамаевҡа иҫкәртеү яһалған һәм уға артабан ул етешһеҙлектәрҙе ҡабатламаҫҡа тәҡдим ителгән.

Ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы Муса Гәрәевтең тыуған ауылында бюст ҡуйылды

Иләкшиделә тантана

Йылдың гүзәл ваҡыты: аяҙ һәм эҫе көндәр. Бөтә юл буйында бик яҡшы үҫеп ултырған игендәр баҫыуҙарын күрәһең, ҡайһы бер ерҙәрҙә арыштар кешеләрҙе, ә айырым участкаларҙа егеүле аттарҙы дуғалары менән уҡ күмеп китә. Ҡуйы һәм шат урмандар күңелле итеп шаулайҙар. Күп һыулы йылғалар көмөш таҫма булып иген ундырышлы тигеҙлектәрҙе һәм яландарҙы уратып алғандар.

Колхоз крәҫтиәндәре тыуҙырған бөтә ошо байлыҡтарға күҙ төшөрөп йәки баҫыуҙар өҫтөндә юғары күтәрелеп һайраған һабан турғайҙарын тыңлап, кеше үҙе йәшәгән ғәиләт, үҙенең хеҙмәте менән ғорурлана.

Көндөҙ Өфө ҡалаһынан сыҡҡан ес машина үҙҙәренең йөрөштәрен тиҙләткәндән-тиҙләтә баралар. Кушнаренковон һуң, уның һирәк урмандарын һәм күк тауҙарын үткәс, машиналар Саҡмағош районының тәҙәк юлдарына төшәләр һәм киң асфальт өҫтөнән барған кеүек, тағы ла ҡыҙыуыраҡ бара башлайҙар. Матур һәм йыйнаҡ ауылдар һәм кешеләрҙең көләс йөҙҙәре күренеп ҡала.

Имәлекулды үткәндән һуң машиналар ҙур булмаған Иләкшиҙе ауылына табан борлалар, унда ҙур тантана. Урамдарҙа байрамса кейенгән кешеләр. Бында күрше ауылдарҙың вәкилдәре лә йыйналалар. Рәжәп ауылынан килгән 14 пионер ауылға үҙҙәренең борғолары һәм барабандары менән инделәр.

Иләкшиҙе ауылында бер ваҡытта ла бындай ҙур байрам булмаған.

— Киләләр, киләләр! тип ҡысҡыралар аттарға атланған йәш малайҙар, яҡынлашып килгән машиналарҙы күреп.

— Беҙҙең яҡташыбыҙ Муса ҡайтып килә, — тигән тауыштар ишетелә.

Һәм бына машинанан күкрәгенә ике Алтын йондоҙ таҡҡан таҙа кәүҙәле летчик сыға. Уның мөләйем йылмайыуынан, ҡотлауҙарҙан һәм ҡул биреп күрешеүҙәрҙән колхоз правленеһе алдындағы ҙур булмаған майҙанға йыйналған кешеләр ысын йөрәктән тулҡынланалар һәм шатланалар.

Иләкшиҙе ауылының крәҫтиәндәре араһында данлыҡлы летчик Муса Ғайса улы Гәрәев баҫып тора, ул һуғыш йылдарында, бөйөк һынау йылдарында 250 тапҡыр боевой осош яһаған кеше. Ошо кеше тураһында инде СССР Верховный Советы Президиумының Михаил Иванович Калинин ҡул ҡуйған Указы буйынса, унда былай тип әйтелгән: «Немец баҫҡынсыларына ҡаршы көрәш фронтында командованиеның боевой бурыстарын Советтәр Союзы Геройы исеме алыуға хоҡуҡ бирерлек итеп өлгөлө үтәгән өсөн Советтәр Союзы Геройҙарын икенсе «Алтын йондоҙ» миҙале менән наградларға, бронзанан бюстәр эшләргә һәм уларҙы наградланыусыларҙың тыуған ерҙәрендә постаменттарға ҡуйырға». Улар араһында Муса Гәрәевтең дә исеме бар ине.

Был Май һәм Октябрь байрамдары көндәрендә Ҡыҙыл Майҙанда өс йыл буйынса хәрби парадтарҙы асҡан кеше Совет Армияһы хәрби-һауа көстәренең боевой летчигы ине.

17 июндә, йәкшәмбе көн, бында геройҙың тыуған ауылында күп меңдәрсә кешеләр ҡатнашлығында митинг булып үтте. Урамдар байрамса биҙәлделәр. Күп һанлы плакаттар һәм лозунгылар бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинде, беҙҙең һөйөклө большевиктар партияһын, Совет хөкүмәтен данлап юғарыға, майҙан өҫтөнә күтәрелделәр.

Митингены хеҙмәтсәндәр депутаттарының Илеш район Советы исполкомы председателе иптәш Каганов асты. Башҡортостан хөкүмәте һәм ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты исеменән Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы председателе урынбаҫары иптәш Изгин сығыш яһаны. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы секретары иптәш Йәркәев, ВКП(б)-ның Илеш район комитеты секретары иптәш Ғәлиев, Бишҡурай мәктәбе уҡытыусыһы, РСФСР Верховный Советы депутаты, элек Муса Гәрәевте уҡытҡан иптәш Девятова, ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы Муса Гәрәев исемендәге колхоздың председателе иптәш Юзикәев, ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитетының пропаганда һәм агитация буйынса секретары иптәш Афридонов һәм башҡа иптәштәр телмәрҙәр менән сығыш яһанылар.

Постамент эргәһенә меңдәрсә кешеләр йыйналдылар. Уларҙың һаны артҡандан-арта. Бюст өҫтөнән япма төшөрөлә. Гимндең тантаналы һуҙҙәре яңғырай. Геройҙың таныш йөҙө скульптор тарафынан бронзаға ғәжәп оҫталыҡ менән күсерелгән: батыр алыҫҡа ҡараған, күҙҙәрен ҡыҫа төшкән, әйтерһең дә ул зәңгәр горизонтта, болоттар араһында һауалағы дошманды эҙләүен дауам иттерә...

Ошо бронзанан эшләнгән, ҡыҙыл гранитҡа урынлаштырылған мәңгелек бюсте солған алған кешеләр был минуттарҙа совет кешеләренең бөйөк бәхете тураһында уйлайҙар.

Совет хөкүмәтенең ҡарары буйынса ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы, еңелмәҫ һауа флоты офицеры, СССР Верховный Советы депутаты, большевиктар партияһы члены Муса Ғайса улы Гәрәевкә бюст ҡуйылды.

Илеге көнгә тиклем бер кемгә лә билдәле булмаған Иләкшиҙе ауылы шулай итеп бөтә республикала билдәле булып әйерелде, сөнки ул тоғро патриот, халыҡтың тоғро улы, сталинсы гвардияның гвардеецын тыуҙырҙы һәм үҫтерҙе.

Муса Гәрәев — башҡорт халҡының ғорурлығы һәм даны ул. Был күренекле летчик хеҙмәт һәм азатлыҡ һөйөүсе халыҡтың иң яҡшы сифаттарын үҙендә туплаған, уның йөҙөндә беҙ Салауат Юлаевтың изге черталарын һәм Шәһит Хоҙайбирҙиндең батырлығын күрәбеҙ.

Муса Гәрәев — бөтә совет халҡының ғорурлығы һәм даны, сөнки уны большевиктар партияһы һәм Совет Армияһы тәрбиәләне. Ул данлы батырҙарҙың алтын плеядаһы иҫәбенә инә. Бөйөк һынауҙарҙа, һуғыш йылдарында Муса Гәрәев бөйөк рус халҡының улдарынан батырлыҡҡа һәм геройлыҡҡа өйрәнде, — уның күҙ алдында Кожедуб һәм Гастелло образдары торҙо.

Ҡайҙа ғына осмаһын, Мариуполь йәки Сталинград өҫтөндәме, Ҡара диңгеҙ йәки Балтика өҫтөндәме, ниндәй генә ҡаты һуғыштарҙа булмаһын: дошмандың ғәскәри эшелондарына һәм танк колонналарына ҡаршы звено башында барһынмы, Муса Гәрәев һәр ваҡытта кешеләрҙең иң яҡшыһы, иң тәрән аҡыллыһы, бөтә батырҙар араһында иң батыры бөйөк юлбашсыбыҙ Сталиндә хәтерендә тотто; штурм авиацияһының хәрби летчиге подполковник Муса Ғайса улы Гәрәевтең йөрәгендә, уйында һәм фекерендә Сталин булды. Ул үҙенең бөтә 250 подвигын — боевой осошон Сталин исеме менән яһаны.

Муса Гәрәев тыныслыҡ эше өсөн ҡыйыу һәм арымай-талмай көрәште. Ул Волганан алып Эльбаға тиклем дошман ғәскәрҙәрен — һуғыштың яуыз көстәрен тар-мар итте һәм ҡыйратты, — был тыныслыҡ эшенә уның вклады. Һәм хәҙер ҙә гүзәл Ҡыҙыл майҙанда Беренсе Май көнөндә хәрби парадты асамы, йәки Академияла лекциялар тыңлаймы, бәләкәй ауыл халҡы алдында митингыла сығыш яһаймы, йәки ҡыйыу рәүештә совет күгә буйлап осамы — ул ябай кешеләрҙең тыныслығын һәм бәхетен, шатлығын һәм азатлығын яҡлай, шуға күрә беҙҙең Гәрәевкә бюст асыу тантанабыҙ шулай уҡ тыныслыҡ һәйкәле һәм символы булып тора.

Һәр бер эпоха үҙ геройҙарын тыуҙырҙы. Кол биләүселәр баҫып алыусыларҙы маҡтанылар. Совет халҡының — үҙ геройҙары, ул талантлы төҙөүселәрҙе һәм тоғро патриоттарҙы — тыныслыҡты һәм халыҡтар азатлығын яҡлаусыларҙы данлай.

Меңәрләгән һәм меңәрләгән данлы батырҙарҙы тәрбиәләгән коммунизм иленә дан!

Иң тоғро һәм батыр, иң бирелгән һәм данлы воиндарҙы тыуҙырған совет халҡына дан!

Бөйөк Сталингә дан!

Һуҙ батырҙың үҙенә бирелде. Муса Гәрәев ашыҡмай ғына, ябай һәм эшлекле итеп үҙенең эштәре һәм үҙ иптәштәренең подвигтәре тураһында һөйләне.

— Ҡәҙерле иптәштәр! Яҡташтар һәм туғандар! — тине ул, — беҙҙең был ерҙәр, Иләкшиҙе, Бишкурай, Түләгән ауылдары — боронғо ауылдар. Беҙҙең бабайҙар күп йылдар элек был болондарға, был яландарға, был шишмә буйҙарына килеп ултырғандар.

Ләкин ысын бәхет 34 йыл элек Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына килде.

Халыҡтың ысын бәхете һәм шатлыҡлы тормошо бөйөк Сталин исеме менән бәйләнгән. Иптәш Сталин беҙҙең бәхетебеҙ өсөн, бөтә ил бәхете өсөн, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең бәхете өсөн тыуҙы, йәшәй, көрәшә.

Тура юлға баҫыу өсөн, өмәтле һәм изге хеҙмәт өсөн, ҙур батырлыҡ өсөн һәр ҡайһыбыҙҙы иптәш Сталин рухландыра.

Боронғо замандан бирле беҙҙең башҡорт халҡы бөйөк рус халҡы менән, үҙенең оло ағаһы менән, ысын дуҫлыҡта, татыулыҡта йәшәне. Беҙ был дуҫлыҡтың нығлығын Бөйөк Ватан һуғышы осоронда айырыуса тойҙоҡ. Мин данлы Сталинград, Ҡара диңгеҙ һәм Балтик диңгеҙе өҫтөрендә дошманға ҡаршы һуғышҡанда рус егеттәре — совет летчиктәре минең алдымда ла, уңымда ла, һулымда ла булдылар.

Ер йөҙөнөң бөтә яҡшы теләкле кешеләре бөгөн бер һуҙҙе — тыныслыҡ һуҙен гел ҡабатлайҙар. Таш шишмә колхозсылары, Саҡмағош юасылары, Белорет металлургтары, Башҡортостан нефтселәре бөйөк коммунизм төҙөлештәренең эшселәре бөтә донъяла тыныслыҡ урынлаштырыу өсөн көрәшәләр.

Һәм был көрәштә улар, һис шикһеҙ, еңәсәктәр һәм донъяла тыныслыҡ буласаҡ.

Ҡәҙерле иптәштәр! Мине тура юлға баҫтырыусы, мине Ватаным хаҡына хеҙмәткә рухландырыусы бөйөк атайыбыҙ Сталингә, халҡыма һәм һеҙгә, дуҫтарым һәм туғандарым, ысын күңелдән рәхмәт әйтәм.

Йәшәһен иптәш Сталин!

Митинг тамамланды. Меңдәрсә кешеләр ауыл эргәһендәге яланда, халыҡ гуляниелары һәм спартакиада үткәреләсәк урынға юнәлделәр. Аттар сабыштырыу, йүгереүселәр ярышы, милли көрәш үткәрелде. Кис менән ауылда спектакль ҡуйылды һәм «Совет Башҡортостаны» кинокартинаһы күрһәтелде.

Иләкшиҙелә булған тантана — совет халҡының бәхетле тормошоноң ҡаҙаныше, патриотик байрам ул.

Әнүәр Бикчәнтәев.



Һүрәттә: ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы Муса Гәрәевкә уның тыуған ауылы — Иләкшиҙелә бронзанан эшләнеп ҡуйылған бюст.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Колхоз председателе иптәш С. ЮЗИКӘЕВ сығышынан

Ҡәҙерле иптәштәр! Беҙҙең яҡташыбыҙ, ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы Муса Гәрәевкә бюст асылыу айҡанлы колхозсылар ҙур шатлыҡ кисерәләр. Һәм беҙҙең ошо шатлығыбыҙҙы беҙҙең менән дә уртаҡлашырға рәхәт итегеҙ.

Һуңғы ваҡытта, колхозыбыҙ эреләтелгәндән һуң, уға Советтәр Союзы Геройы Муса Гәрәев исеме бирелде. Был беҙҙең колхозсыларыбыҙ ҙур күтәренкелек һәм үҙ эштәренә ҡарата булған ҡайнар мәхәббәт тойғоһон сағылдыра.

Колхозыбыҙ район күләмендә иң алдынғыларҙан береһе булып иҫәпләнә. Уны артабан байытыу байлыҡтарға өлгө булырлыҡ юғары культуралы, эре социалистик хужалыҡ итеү өсөн колхоз члендәре бер семьялай татыу эшләйҙәр. Беҙ колхоздарҙа һәм совхоздарҙа общественный малсылыҡ үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын былтыр уҡ срогынан алда үтәнек. Шулай уҡ 1950 йылда хөкүмәткә иген тапшырыуҙы ла бер нисә көнгә алдан тамамланыҡ.

Быйылғы яҙғы сәсеү эштәре юғары агротехник кимәлдә, ваҡытынан алда, арттырып үтәлде. Шуның менән беҙ быйыл тағы ла мул урожай алыуға ышаныслы нигеҙ һалдыҡ.

Тиҙҙән ауыл хужалығы эшенең иң яуаплы осоро — урожай йыйыу ваҡыты башлана. Беҙ уға тулыһынса әҙер. Урожайҙы иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә йыйнарға, государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда үтәп, республикабыҙҙағы алдынғы колхоздарҙың береһе сафында булырға бөтә колхозсылар исеменән һүҙ бирәм. Һәм беҙ әйткән һүҙебеҙҙә торасаҡбыҙ.

Беҙҙе яҡты һәм бәхетле тормошҡа алып килгән бөйөк Сталингә ысын күңелдән бик ҙур рәхмәт! Уның тағы ла бик оҙаҡ йылдар йәшәүен теләйбеҙ!

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары иптәш З. ИЗГИН телмәренән

СССР Верховный Советы Президиумы Указы буйынса ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы исемен алған Муса Ғайса улы Гәрәевтең тыуған ауылында постамент-бюст ҡуйылды.

Муса Ғайса улы Гәрәевкә постамент-бюст асыу Илеш районы хеҙмәтсәндәре һәм Совет Башҡортостаны граждандары өсөн генә түгел, бәлки бөтә Советтәр Союзы өсөн ҙур ваҡиға булып тора. Сөнки иптәш Гәрәев — беҙҙең Ватаныбыҙҙың тоғро патриоты, героик большевиктар партияһының тоғро улы. Уны гүзәл совет ысынбарлығы, коммунистик общество, бөйөк Ленин — Сталин партияһы тәрбиәләне.

Немец-фашист илбаҫарҙарға ҡаршы һуғышта Советтәр Союзының бөтә халыҡтары менән бер сафта Салауат Юлаевтың тоҡомдары — башҡорт халҡының улдары көрәштеләр. Бөтә воиндар менән бергә, башҡорт воиндары совет ғәскәрҙәренең боевой операцияларының бөтә этаптарында, грандиоз һөжүм итеү хәрәкәттәрендә батырлыҡ, данлылыҡ һәм героизм өлгөләре күрһәттеләр.

Совет Армияһының ҡыйыу офицерҙары — беҙҙең яҡташтарыбыҙ, Советтәр Союзы Геройҙары Муса Гәрәев, Таһир Кусимов, генерал Шәймөрәтов һәм башҡа бик күптәр үҙҙәрен дан менән ҡапланылар.

Колхоз крәҫтиәне Ғайса Гәрәевтең улы ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы Муса Гәрәев Тыуған ил өсөн немец юлбаҫарҙарына ҡаршы һуғыштарҙа бер нисә тапҡыр танылды. Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы ҡаты һынау йылдарында Муса Гәрәев, күп кенә фронттарҙа геройҙарса һуғышып, грандиоз көрәштәрҙә һәм ҡан ҡойҙорғос һуғыштарҙа воин, үҙ Тыуған иленең һаҡлаусыһы булып сыныҡты.

Сталинградтан башлап Муса Гәрәев немец-фашист илбаҫарҙарын тар-мар итеүҙә туранан-тура ҡатнашты. Ул дошмандың техникаһын һәм йәнле көсөн оҫта тар-мар итеп, хәрби командованиеның приказдарын изге үтәне. Ул Сталинград һәм Донбасс янында, Белоруссия һәм Балтик диңгеҙе янында һуғышты. Был батыр егет 250 тапҡыр хәрби осош яһаны.

Совет хөкүмәте башҡорт халҡының улы Муса Гәрәевтең подвигын юғары баһаланы. Уны Ленин ордене, өс Ҡыҙыл Байраҡ ордене, Александр Невский, Богдан Хмельницкий, Ҡыҙыл йондоҙ, беренсе дәрәжә Ватан һуғышы орденары, «Батырлыҡ өсөн», «Сталинградты оборалау өсөн» һәм «1941—1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында Германияны еңгән өсөн» медалдәре менән наградланы.

Ҡурҡыуһыҙлығы һәм батырлығы өсөн, күрһәтелгән героизм өсөн уға ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы тигән исем бирелде.

Иптәш Гәрәев халыҡтың үҙ теләге менән, Сталинсы Конституция ҡояшы аҫтында СССР Верховный Советына депутат итеп һайланды. Беҙ Муса Гәрәевтең бер үҙе генә булмауы, бөйөк рус халҡының улдары уның хәрби иптәштәре, уҡытыусылары һәм дуҫтары булыуы менән ғорурланабыҙ. Совет халҡы беҙҙең эпохаҙың Покрышкин һәм Кожедуб кеүек, тиңдәше булмаған летчиктәрен, Александр Матросов һәм геройҙар—панфиловсылар кеүек воиндарҙы бирҙе. Беҙ Муса Гәрәевтең гвардеец тигән юғары исемде намыҫлы аҡлауы менән ғорурланабыҙ.

Орденле Башҡортостан хеҙмәтсәндәре үҙ яҡташтарының — Советтәр Союзы Геройҙарының үлемһеҙ подвигтәре менән ғорурланырға хаҡлылар. Уларҙы данлыҡ ошо бөйөклөгөнә совет ҡоролошо күтәрҙе, уларҙы большевиктар партияһы үҫтерҙе, уларҙы геройҙар итеп бөйөк Сталин тәрбиәләне.

Башҡорт халҡының улдары үҙҙәренең өлкән ағайҙары, рус халҡының героик улдары, бөтә совет халыҡтарының боецтары менән бергә ҡулға-ҡул тотоношоп, социалистик Ватанды һаҡларға барҙылар һәм улар Еңеүҙең Бөйөк маршалы иптәш Сталиндең хәрби приказдарын намыҫ менән үтәнеләр. Иптәш Сталиндең исеме беҙҙең халҡыбыҙҙы һәр ваҡыт Совет Ватанының даны хаҡына хеҙмәткә һәм подвигҡа рухландырҙы.

Совет кешеләре тыныс хеҙмәт менән шөғөлләнәләр, улар коммунизм төҙөү эше менән шөғөлләнәләр, ләкин коммунизм дошмандары — тыныслыҡ дошмандары үҙҙәренең ҡара эштәрен дауам иттерәләр, улар егенсе донъя һуғышын башлап ебәрергә тырышалар. Совет кешеләре Америка-Англия һуғыш тоҡандырыусыларының бөтә эҙләнеүҙәрен ныҡ һәм һиҙгер күҙәтәләр.

Совет кешеләре тыныслыҡ эшен ныҡ һәм ныҡышмалы, батыр һәм ҡыйыу һаҡлайҙар. Тыныслыҡ өсөн көрәштә большевиктар партияһының героик улы, Совет Армияһы Хәрби-һауа Көстәренең беренсе класлы летчигы Муса Гәрәев артабан да азатлыҡ һәм бәхет өсөн көрәшселәрҙең беренсе сафында булыр.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының секретары иптәш И. ЙӘРКӘЕВ телмәренән

Иптәш Гәрәевтең был бюсе Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында совет халҡы тарафынан күрһәтелгән героизмға — батырлыҡҡа символ булып тора. Коммунистар партияһы һәм халыҡтарҙың бөйөк даһие иптәш Сталин етәкселегендә беҙҙең халҡыбыҙ Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында үҙенең социалистик Тыуған иленең намыҫын, иреген һәм бойондороҡһоҙлоғон яҡлап алып ҡалды, кешелекте фашизмдең ҡара чумаһынан ҡотҡарҙы, Европа һәм Азияның күп халыҡтарына тыныслыҡ һәм ирек алып бирҙе.

Илебеҙҙең бөтә халыҡтары менән бергә, ҡулбашты ҡулбашҡа терәп, бөйөк Ватан һуғышы фронттарында башҡорт халҡының улдары һәм ҡыҙҙары һуғыштылар. Республикабыҙҙың ике йөҙгә яҡын воиндары — Ватан һуғышында ҡатнашҡан кешеләре Советтәр Союзы Геройы тигән бөйөк исемде алыуға өлгәштеләр, меңләгән воиндар — һуғышта ҡатнашҡан кешеләр орденар һәм медалдар менән наградландылар.

Советтәр Союзы геройҙары — батырҙары араһында совет халҡының данлыҡлы улы, беҙҙең яҡташыбыҙ, Тыуған иленә, үҙ халҡына, Ленин — Сталин партияһына оҙағына тиклем бирелгән ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы, СССР Верховный Советы депутаты иптәш Муса Ғайса улы Гәрәев та бар.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең иптәш Гәрәевте икенсе тапҡыр СССР Верховный Советы депутаты итеп һайлау һәм бөгөн уның тыуған ерендә бронзанан эшләнгән бюст урынлаштырыу факттары, Совет иленең ҡеүәтен нығытыу эшенә, коммунизм төҙөү эшенә ысын күңелдән бирелгән иң яҡшы улдары һәм ҡыҙҙарының подвигтәре һәм героизмы — батырлыҡтары Тыуған илебеҙ тарафынан ныҡ баһаланыуының ап-асыҡ күрһәткестәре булып тора.

Беҙ, совет кешеләре, Тыуған илебеҙҙең иң яҡшы улдары һәм ҡыҙҙары өлгөһөнә эйәреп, киләсәктә Ватаныбыҙҙың — государствобыҙҙың ҡеүәтен тағы ла нығытыуға, илебеҙҙә коммунизм төҙөү бурыстарын уңышлы хәл итеүгә һәм бөтә донъяла тыныслыҡты нығытыуға үҙебеҙҙең бөтә көсөбеҙҙе, энергиябыҙҙы һәм белемебеҙҙе бирергә, был бурыстарҙы тормошҡа ашырыу юлында арымай-талмай эшләргә тейешбеҙ.

Беҙҙең алда бөтә халыҡ хужалығы тармаҡтары буйынса мөһим бурыстар тора. Ауыл хужалығы өлкәһендә төп бурыстар бөтә культуралар буйынса ла юғары урожай алыу, малсылыҡты үҫтереү, уның продукт биреүен күтәреү, колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яҡтан нығытыуҙан тора.

Ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы Муса Гәрәев үҙенең тыуған ауылында, элек үҙен уҡытҡан уҡытыусылар — РСФСР Верховный Советы депутаты З. Девятова һәм М. Девятов иптәштәр менән.

Һүрәттә: (һулдан уңға) Муса Гәрәев

М. Әхмәтьянов фотоһы.

ВКП(б)-ның Илеш райкомы секретары иптәш Ш. ҒӘЛИЕВ телмәренән

Беҙ үҙебеҙҙең яҡташыбыҙ, данлы сталинсы уласын, ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы, СССР Верховный Советы депутаты иптәш Гәрәев Муса Ғайса улына тантаналы монумент асабыҙ.

Ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы иптәш Гәрәевтең үҙенең тыуған ауылында постаментҡа ҡуйылған бюсе үҙ социалистик Тыуған иленең даны өсөн батырлыҡ, ҡыйыулыҡ һәм геройлыҡ күрһәтеүсе ябай кешеләр тураһында коммунистар партияһының, туған Совет хөкүмәтебеҙҙең һәм бөйөк Сталиндең хәстәрлек күреүен һәм хөрмәт менән ҡарауын күрһәтә.

Ленин байрағы аҫтында, кешелек генийе Генералиссимус Сталин юлбашсылығында совет халҡы һәм уның Ҡораллы Көстәре бөтә прогрессив кешелектең ҡотҡонған дошманы өҫтөнән бөтә донъя әһәмиәтендәге тарихи еңеүгә өлгәште һәйкәле Тыуған илебеҙҙең, беҙҙең халҡыбыҙҙың намыҫын, азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап алып ҡалды.

Немец-фашист ғәскәрҙәре тарафынан Тыуған илебеҙгә яһалған яралар партия һәм бөйөк Сталин етәкселегендә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә төҙәтелделәр. Совет кешеләре СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең һуғыштан һуңғы сталинсы биш йыллыҡ планын срогынан алда үтәнеләр һәм коммунизмдең материаль-техник базаһын, коммунизмдең гигант төҙөлештәрен — Куйбышев, Сталинград, Каховка гидроэлектростанцияларын, Төп Төркмәнстан, Төньяҡ Ҡырым, Көньяҡ Украина һәм Волга — Дон каналдарын төҙөй башланылар, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсы планы уңышлы тормошҡа ашырыла.

Ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы иптәш Гәрәевкә ҡуйылған монумент беҙҙең халҡыбыҙ бәхетенә, Тыуған илебеҙ даны һәм бөйөклөгө өсөн беҙҙең һәр беребеҙгә фиҙакәр хеҙмәткә саҡырыусы символ булып хеҙмәт итһен. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе үҙ ваҡытында үткәреү, общественный малсылыҡ өсөн аҙыҡ туплау планын үтәү, урожайҙы юғалтыуһыҙ йыйыу. Совет государствоһы алдындағы бөтә йөкләмәләрҙе лә һәр бер колхоздың һәм айырым колхозсыларҙың срогынан алда үтәүе — тыныслыҡ, демократия, социализм өсөн һәм илебеҙҙә коммунизм еңеүе эшенә ҙур өлөш буласаҡ.

РСФСР Верховный Советы депутаты иптәш З. ДЕВЯТОВА сығышынан

Беҙҙең ауылдашыбыҙ, һөйөклө геройыбыҙ Муса Гәрәевкә бюст ҡуйылды. Иптәш Гәрәев беҙҙең мәктәптә ете йыл тәрбиәләнде һәм шуға күрә лә ул беҙгә бигерәк тә яҡын. Уның ике тапҡыр Советтәр Союзы Геройы исеме алыуы бөтәбеҙ өсөн дә бик ҙур шатлыҡ һәм ғорурлыҡ. Иптәш Гәрәевтең күрһәткән подвигтәре беҙҙең көндәлек эшебеҙҙә — йәш быуынды коммунистик рухта тәрбиәләүҙә йәнле өлгө булып тора.

Кешеләрҙең хеҙмәте, батырлыҡтары бары тик беҙҙең илебеҙҙә генә ошолай бөйөк баһалана. Элек хурлыҡ булып иҫәпләнгән хеҙмәт, хәҙер беҙҙә намыҫ һәм дан эшенә әйләнде.

Совет власы йылдарында коммунистар партияһы һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең атайҙарса хәстәрлектәре арҡаһында Муса Гәрәев һымаҡ, йөҙәрләгән геройҙар тәрбиәләнделәр һәм улар коммунизм төҙөүсе совет халҡының алдынғы сафында баралар. Был сафта беҙҙең ауылдашыбыҙҙың булыуы беҙҙе тағы ла нығыраҡ шатландыра.

Иптәш Гәрәев бюсе эргәһенән үткән һайын, халҡыбыҙға һәм Ватаныбыҙға намыҫ менән батыр хеҙмәт итеүең өсөн бик ҙур рәхмәт һиңә, иптәш Гәрәев, тиербеҙ беҙ. Һәм һинең был бюсең беҙҙең хеҙмәтсәндәребеҙҙе тағы ла ҙур подвигтарға рухландыра.

МУСА БАТЫРҒА

Сал шоңҡар, Урал ҡошонан да
Бөйөк осҡан батыр егеттең,
Данлы итеп ҡуя туған Ватан
Муса Гәрәевтең бюсен.

Ауыр көрәш йылып уттар аша
Үттең Муса юлың балҡытып,
Һәм дошмандың илем ҡосағына
Яҙ килеүен хуш еҫ аңҡытып.

Халыҡ бәхете өсөн һәрәм йөрттең,
Ил тыуҙырған ҡыйыу уласын,
Бөгөн да һин хеҙмәт майҙанында
Кирәһең шат йәшәүек ҡоласын.

Һигеҙ орден, ике алтын йондоҙ
Күкрәгеңде биҙәй, нур бөркөп.
Мәңгелек дан! Яҡташ, ил үҫтергән
Ҡаһарман дуҫ, ғорур, шат бәркәт.

Яҡты бюсең — хеҙмәт, шат тормоштоң
Символы һәм йәшәү шатлығы,
Замандаштарыңдың хөрмәтләүе,
Изге көрәшеңдең сафлығы.

Күрһен һин дошман атом яһай
Донъя көйһөн өсөн янында,
Һәм шуға ла уяу, ныҡ торһын,
Бөйөк тыныслыҡтың һағында.

А. Игебаев.

Яҡшы башланғыс

Ошо көндәрҙә Башҡорт государство филармонияһының колхоз-совхоз бригадаларына общественный просмотр булды. Һөҙөмтә филармония артистарының һуңғы ваҡыттарҙа ижади яҡтан яҡшы уҡ ҡына үҫеүҙәрен, бөтә бригадаларҙың һәм коллективтарҙың концерт номерҙарының сифаты яҡшырыуын күрһәтте. Улар күптән түгел республикабыҙҙың ҡалаларына һәм ауылдарына йәйге гастролгә киттеләр.

20 кеше составындағы йыр һәм бейеү ансамбле Ишембай, Бөрө, Стәрлетамаҡ ҡалаларында һәм республикабыҙҙың 33 районында булып, 60-тан артыҡ концерт бирәсәк. Ансамблдең программаһы башҡорт халыҡ йырҙары, бейеүҙәре һәм башҡорт, рус совет композиторҙарының әҫәрҙәренән тора.

Иптәш Хөснәтдинов етәкселегендәге башҡорт эстрада бригадаһы республикабыҙҙың күп кенә райондарында булып колхозсыларға Чеховтың «Яҡшы бөткән эш хәйерле», Волиндең «Немец ҡатыны», Береговаяның «Препарат СФА» тигән бер шаршаулыҡ пьеса һәм концерт номерҙәре күрһәтәсәктәр.

Филармонияның иптәш Садретдинов етәкселегендәге икенсе колхоз-совхоз бригадаһы гастролгә ике программа менән сығып китте. Был коллектив концерт номерҙарынан тыш тамашасыларға «Башҡорт халыҡ йырҙары» тигән лекция-концерт бирәсәк. Бында башҡорт халҡының бай һәм тәрән эстәлекле йырҙарын киң халыҡ массаһына пропагандалау һәм уларҙы башҡорт халыҡ йырҙарының тарихтәре менән таныштырыу маҡсат итеп ҡуйыла.

Башҡорт халҡы әкиәттәргә, мәҡәләргә, легендаларға, йырҙарға һәм көйҙәргә бик бай. Улар быуындан-быуынға, телдән-телгә күсеп килгәндәр. Быуаттар буйына иҙелеп, ярлылыҡта, батша Россияһы ваҡытында ярым колония хәлендә йәшәгән башҡорт халҡы үҙенең йырҙарында аһ-зарын, нәфрәтен, киләсәккә хыялын һәм өмөтөн сағылдырған. Башҡорт халыҡ йырҙары үҙҙәренең көйлө, матур, моңло, тойғоло һәм тәрән эстәлекле булыуҙары менән айырылып торалар. Шуның арҡаһында улар әле лә яратылып йырланалар, тыңланалар һәм күптәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итәләр.

Лекция-концерттың төҙөлөшө бик уңышлы. Лектор (артистка иптәш Исмәғилова) тамашасыларҙы теге йәки был йыр менән таныштырғандан һуңында ошо уҡ көй йырсы тарафынан йәки башҡа берәй музыка инструментында башҡарыла. Был, әлбиттә, тыңлаусыларҙа ҙур тойғо һәм эффект ҡалдыра.

Лектор аҡрынлап Россия халыҡтарына ирек һәм бәхет алып килгән онотолмаҫ 1917 йылдарға һәм Совет власе осорона күсә. 1917 йылда Россия өҫтөндә азатлыҡ ҡояшы балҡығас, башҡорт халҡы ла оло юлға сыҡты, бөтә милләттәр менән бергә тиң хоҡуҡ алды. Ленинсе-сталинсы милли политика нигеҙендә беҙҙең йәмғиәтебеҙ формаһы менән милли культурабыҙ үҫте, сәскә атты. Искусствобыҙ бығаса тиклем күрелмәгән юғарылыҡҡа күтәрелде. Халыҡ йырҙары нигеҙендә беҙҙең композиторҙарыбыҙ опералар, балеттар, бөгөнгө совет ысынбарлығын сағылдырған матур-матур көйҙәр ижад итәләр. Был көйҙәрҙә, беренсе булараҡ, беҙҙең гигант төҙөлөштәребеҙ, социалистик ҡалаларыбыҙ, ауылдарыбыҙ, урмандарға, йылғаларға бай булған тәбиғәтебеҙ сағылдырыла һәм беҙҙе коммунизм еңеүҙәренә алып барыусы бөйөк Ленин һәм Сталин образдары кәүҙәләндерелә.

Концертта Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған артисткаһы Зәйтүнә Илбаеваның ҡатнашыуы уның сифатын тағы ла яҡшырта. Лекцияның тексы Л. Н. Лебединский тарафынан уңышлы яҙылған.

Был яҡшы башланғыс, һис шикһеҙ, республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре тарафынан йылы ҡаршыланасаҡ.

Был бригада Башҡортостандың иң алыҫ Учалы, Белорет, Бөрйән, Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла һәм башҡа күп кенә райондарында булып, 100-ҙән артыҡ концерт бирәсәк.

Р. Хөсәинов.

Өфө нефть институтында государство экзамендәре

Өфө нефть институты Башҡортостандың нефть промышленносе өсөн инженерҙар һәм фәнни кадрҙар әҙерләүҙә беҙҙән-бер төп база булып һанала.

Институт ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә юғары квалификациялы преподавателдәр менән комплектовать ителде, яҡшы лабораториялар менән байыҡтырылды. 1945 йыл менән сағыштырғанда, унда студенттар һаны алты тапҡырға артты.

Үҙенең йәшәү дәүерендә институт өс тапҡыр йәш инженерҙар әҙерләп сығарҙы. Улар хәҙер Башҡортостандың һәм башҡа республикаларҙың нефть промыселдарында һәм нефть эшкәртеү заводтарында эшләйҙәр. Быйыл тағы ла күп кенә специалистар сығарыласаҡ.

Хәҙер экзамендәр башланды. Институттың партия ойошмаһы, дирекция экзамендәргә әҙерлек буйынса байтаҡ ҡыҙыу саралар үткәрҙеләр. Факультеттар буйынса партия һәм комсомол йыйылыштары уҙғарылып, экзамендәргә әҙерлек эшсенең торошо тикшерелде.

Партбюро ултырышында һәм ғилми совет кәңәшмәһендә алда торған бурыстарҙы уңышлы хәл итеүгә йүнәлдерелгән бик күп кенә ҡиммәтле тәҡдимдәр индерелде. Политик һәм уҡытыу-тәрбиә эштәрен яҡшыртыу мәсьәләләре бөтә уҡыу йылы буйына партия ойошмаһының иғтибар үҙәгендә булды. Һөҙөмтәлә уҡыу сифаты күтәрелде һәм дисциплина яҡшырҙы.

Экзамен сессияларҙы уҙған уҡыу йылына йомғаҡ яһау менән бергә, институттың партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының да эштәренә тикшереү булып тора.

Тәүге көндәрҙең йомғаҡтары студенттарҙың үтелгән материалды яҡшы үҙләштереүҙәрен күрһәтте.

Марксизм-ленинизм нигеҙҙәре буйынса «5» һәм «4» билдәһе алыусыларҙың һаны бигерәк тә күп.

Коммунистар үтелгән фәндәрҙе яҡшы үҙләштереүҙең айырыуса яҡшы өлгөһөн күрһәтәләр. ВКП(б) члендәренән Лоторев, Бахтияров, Свиридов, Шапиев һәм башҡа иптәштәр тапшырылған бөтә фәндәр буйынса ла «5» билдәләре генә алдылар.

Студенттарҙың күпселеге экзамендәр ваҡытында математика, физика, инглиз теле һәм техник фәндәр буйынса үҙҙәренең яҡшы белемгә эйә булғанлыҡтарын күрһәттеләр.

— Экзамендәрҙе барыһын да юғары күрһәткестәр менән генә тамамлаясаҡбыҙ,— тиҙәр студенттар. Был—Ленин—Сталин партияһының, Совет хөкүмәтенең һәм личнә иптәш Сталиндең совет студенттары һәм фәнни работниктар тураһында өҙлөкһөҙ хәстәрлек күреүҙәренә институт коллективының иң яҡшы яуабы булыр.

Р. Дауытов,
Өфө нефть институтының партбюро секретары.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Быйыл республикабыҙҙың күп кенә колхоздары йөк автомашиналары һатып алдылар. Ошо йылдың биш айында ғына Башсоюз колхоздарға ике йөҙгә яҡын автомашина һатты. Шул иҫәптән Асҡын районының ун колхозы, Учалы районының һигеҙ колхозы һәм Стәрлетамаҡ районының ете колхозы автомашина һатып алды.

Н. Андреев.

* * *

Әбйәлил. Молотов исемендәге колхоздың өсөнсө номерлы бригадаһы. Дүртйәлә хеҙмәтсәндәренең саҡырыуына ҡушылып, мәктәпкә утын әҙерләүҙә воскресник уҙғарҙы. Һөҙөмтәлә Әбделмәмбәт ете йыллыҡ мәктәбенә 1951—52 уҡыу йылына етерлек утын әҙерләнде.

Воскресникта Сабитов һәм Өмәткужин Исмәғил иптәштәр етәкселегендәге звенолар айырыуса яҡшы эшләнеләр.

З. Ишморатов.

* * *

Туймазы. Быйыл «Баллы тау» колхозында радиоузел төҙөлдө һәм ул май айының аҙағында эшләй башланы. Быны төҙөү өсөн колхоз 20 мең һум аҡса тотто. Хәҙер колхозсыларҙың 144 йорто һәм 9 общественный йорт радиолаштырылды ла инде. Шулай уҡ ул Тельман исемендәге күрше колхоздың 100 йортон хеҙмәтләндерәсәк.

Ф. Миңлеева.

* * *

Ҡыйғы. Ләүҙә балалар йортонда тәрбиәләнеүсе балаларҙың йәйге ялы күберәк саф һауала, һыу буйҙарында һәм урмандарҙа үтә.

Күптән түгел бер төркөм тәрбиәләнеүселәр илде өйрәнеү өсөн 5 көнлөк походта булдылар. Улар походта үҫемлектәрҙең, ағастарҙың төрҙәрен һәм тупраҡтың составын өйрәнделәр.

Балалар тағы ла МТС-та, район типографияһында, электростанцияла һәм башҡа урындарҙа экскурсияла буласаҡтар.

З. Вәлиев.

* * *

Өфө. Республика күләмендә ҡошсолоҡ эшен алға сөрөү өлкәһендә һуңғы йылдарҙа байтаҡ практик эштәр башҡарылды. Һуңғы ваҡытта 12 инкубатор станцияһы төҙөлөп эксплуатацияға тапшырылды.

Былар араһында Бәзәяҙҙа 82 мең йомортҡа һыйҙырышлы 3 станция, Баҡалыла 80 мең урынлы 2 станция, Благоварҙа 78 мең урынлы 2 станция һәм башҡа район инкубатор станциялары бар.

Шулай уҡ оҙаҡламай Әбйәлил, Ҡалтасы, Белорет һәм Зианчура райондарында тағы ла 4 инкубатор станцияһы тиҙ көндә эшкә башлаясаҡ.

В. Кондров.

* * *

Егәҙе леспромхозы коллективы 1951 йылда һал ағыҙыу һәм ағасты һыуҙан сығарыу эштәрен районда беренсе булып тамамланы. Һал ағыҙыу эштәрен ҡыҫҡа срокта тамамлап, май айында ағас әҙерләү һәм ташыу планын арттырып үтәне.

Белорет урман конторитаһының был алдынғы леспромхозына ВКП(б) райкомының һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 18 июнь. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 18 июнда дүрт держава сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары 72-се ултырыштарына йыйналдылар. АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

СССР вәкиле А. Громыко Атлантик пакт һәм Европа илдәрендә һәм Яҡын Көнсығышта АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне килешелмәгән пункт сифатында көн тәртибенә индереү тураһындағы совет тәҡдимен тикшереүҙе дауам иттереү кәрәклеген күрһәтте.

Ләкин көнбайыш державаларҙың вәкилдәре был мәсьәлә буйынса дискуссияны дауам иттереүгә ҡаршы килделәр һәм АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең 15 июндәге ноталарына Совет хөкүмәтенең официаль яуабы алынғандан һуң йыйналырға кәрәк, тип иҫәпләүҙәре тураһында белдерҙеләр.

Шуның менән ултырыш ябылды.

Францияла парламентҡа һайлауҙарға ҡарата

ПАРИЖ, 18 июнь. (ТАСС). Парламентҡа һайлауҙарҙың һөҙөмтәләре тураһында хәҙергә ваҡытҡа тиклем тулы һәм тамам мәғлүмәттәр иғлан ителмәгән әле. Ләкин, күп кенә һайлау округтары буйынса тауыштарҙы иҫәпләүҙең ҡайһы бер һөҙөмтәләре, һайлау кампанияһы барышында коммунистик партияларҙың члендәре дусар ителгән фашистик террорға һәм югәнһеҙләндерелгән полиция баш-баштаҡлығына ҡарамаҫтан, йыйналған тауыштар һаны буйынса был партияның беренсе урынды алып тороуын күрһәтәләр. 18 июнда 12 сәғәт 30 минутта, иҫәпләнгән 17.103.493 тауыштың ҡаршылыҡ күрһәтеүҙең республикан һәм антифашистик союзы (коммунистар һәм уларға ҡушылыусылар) 25,76 процентен, үҙен «француз халҡының берекмәһе» (РПФ) тип йөрөтөүсе деголсе партия — 20,84 процентен, социалистик партия — 15,5 процентен, католик партия МРП («халыҡ-республика хәрәкәте») — 12,18 процентен, «бойондороҡһоҙҙар һәм крәҫтиәндәр союзы» (уң һайлау блогы) — 11,98 процентен алған, тип иғлан ителде. Ҡалған тауыштар төрлө ваҡ партиялар араһында бүленгән.

Франс пресс агентствоһының мәғлүмәттәренә ҡарағанда, һәр бер дүртенсе һайлаусы тауыш биреүҙән баш тартҡан һәм һәр бер дүртенсе һайлаусы коммунистар өсөн тауыш биргән. Коммунистар өсөн тауыш биреп, француз халҡы тыныслыҡҡа үҙенен ихтыярын демонстрациялаған. Шулай итеп, француз реакцияһының планын — үҙҙәренең һуғыш политикаһын ирекле үткәреү өсөн бөтә төр махинациялар һәм ялған яҙыуҙар ярҙамында коммунистар партияһын изолировать итеү планын — француз хеҙмәтсәндәре өҙгәндәр. 17 июнда тауыш биреү француз халҡының киң массаһының һуғышты теләмәүен һәм хөкүмәт тарафынан үткәрелгән политиканы ғәйепләүен асыҡ күрһәтте.

«Сэ суар» газетаһының 577 депутатлыҡ урынды бүлеүгә ҡағылған мәғлүмәттәренә ҡарағанда, коммунистар 103 урын, социалистар — 98, РПФ — 111, МРП — 85, «бойондороҡһоҙҙар һәм крәҫтиәндәр союзы» — 82, «һул республикансылар берекмәһе» (төп ядроһы булып радикалдар торған уң группировка) һәм ЮДСР — «ҡаршылыҡ күрһәтеүҙең демократик һәм социалистик союзы» — 86 урын алған.

Был мәғлүмәттәргә ҡарағанда, коммунистар тауыштарҙың айырыуса күп һанын йыйһалар ҙа, ғәҙел булмаған антидемократик һайлау системаһы арҡаһында, күрәһең, Милли собраниела мандаттарҙың байтаҡ һанын юғалтырҙар, ләкин улар унда ҙур парламент группаһын төҙөйәсәктәр, ул хеҙмәтсән массаларҙың интерестәре өсөн үҙ көрәшен дауам иттерә аласаҡ.

Көнбайыш Германияла йәш немец патриоттарын әҙәрләү

ЛОНДОН, 18 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһы хәбәрсеһенең Килдән хәбәр итеүенә ҡарағанда, Англияның Көнбайыш Германиялағы оккупацион властарының трибуналы Гельголанд утрауын Англияның өйрәнеү бомбардировкалары өсөн милек сифатында файҙаланыуға ҡаршы протест билдәһе итеп утрауҙа демонстрацияла ҡатнашҡан өсөн 22 йәш немец патриотын 18 июнда 6 айға тиклем срокҡа төрмәгә ябырға хөкөм иткән. Хөкөм ителеүселәр араһында 4 ҡыҙ бар.

Америка военщинаһының Көнбайыш Берлиндәге яңы манёвры

БЕРЛИН, 18 июнь. (ТАСС). АДН агентствоһы Америка оккупацион властарының Көнбайыш Берлиндәге яңы манёвры тураһында хәбәр итә. Был властар алдау юлы менән немецтарҙы яллаусылар армияһына яллауҙы көсәйтергә ынтылалар.

Көнбайыш Берлиндә, тип күрһәтә агентство, Американың «сит ил легионына» хеҙмәткә инеүсе немец яллаусыларына Америка граждандығын бирергә вәғәҙә итәләр. 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге бөтә буйҙаҡ ирҙәргә немец граждандығынан баш тартырға һәм Америка һалдаттары булырға «тәҡдим ителә».

Яллаусылар АҠШ-та өйрәнеү үтергә тейештәр. Америка хәрби властарының официаль белдереүҙәренең берәһенән күренгәнсә, ошо яллаусылар унда үҙҙәренә Америка граждандығын биреү тураһында ғариза бирә алалар. Армияла хеҙмәт итеү осоронда үҙҙәренең «ышаныслы булыуҙарын» раҫлаған ваҡытта улар биш йылдан һуң «бөтә хоҡуҡтар һәм өҫтөнлөктәр менән» АҠШ граждандары була алалар.

Ләкин Америка хәрби учреждениеларының немец хеҙмәткәрҙәре, Америка яллаусылары был кампанияны хатта «ҙур вәғәҙәләр» менән дә йәпләндерә алмайҙар, тип хәбәр итәләр.

Иран властарын ҡурҡытырға маташып, инглиздәр Басрға ғәскәрҙәр ебәрәләр

НЬЮ-ЙОРК, 18 июнь. (ТАСС). «Нью-Йорк джорнал энд Америкэн» газетаһының Тегерандағы хәбәрсеһе, Ирандың хәрби кругтарынан алынған хәбәрҙәргә һылтанып, Басрҙағы (Ирак) армия лагеро Маргилгә «Англия гарнизонын нығытыу өсөн» 5 инглиз пехота батальоны һәм ҡайһы бер артиллерия подразделениелары килгән, тип хәбәр итә.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 18 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 18 июнда 38-се параллелдән төньяҡтараҡ районда Халыҡ армияһының частары, Ҡытай халыҡ ирекмәндәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәттә Америка-Англия интервенттарының һәм Ли Сын Ман ғәскәрҙәренең ярһыулы атакаларын уңышлы кире ҡағыуҙы дауам иттерәләр, тип хәбәр итте.

Халыҡ армияһының Көнсығыш яр буйында хәрәкәт итеүсе яр буйы оборонаһы частары Чхоннжинь порты районында дошмандың 2 тральщигын һәм 1 ... һыуға батырғандар.

Төнгө бомбаға тотоусы авиацияның соединениеһы Инчонда Американың ... лыҡ складтарын һәм тәьмин итеүсе складтарын шулай уҡ Американың ... дыншхолағы аэродромын бомбаға тотҡандар.

18 июнда дошман самолеттарын ... теүсе уҡсылар-охотниктар дошмандың ... самолетын атып төшөргәндәр.

Англияның хәрби әҙерләнеүҙәре

ЛОНДОН, 18 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһы, Англияның тәьминат министрлығының белдереүенә ярашлы рәүештә, автомобилдәрҙән башлап кухняла ... булған ваҡ һауыт-һабаларға тиклем ... күп һандағы тауарҙар етештереүҙә никель ҡулланыу 22 июндән тыйыласаҡ, тип тапшыра. Был, тип күрһәтә агентство, ҡайтанан ҡоралландырыу программаһын тормошҡа ашырыу өсөн ... келде әлеһән-әле киңерәк ҡулланыу ... иән аңлатыла.

22 августан алып башҡа күп кенә ... уарҙарҙы етештереүҙә лә никель ҡулланыу тыйыласаҡ.

Франция авиацияһы Вьетнамдың халыҡ йәшәй торған пункттарын варварҙарса бомбаға тота

ШАНХАЙ, 18 июнь. (ТАСС). Вьетнам информация агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Франция империалистарының авиацияһы Вьетнамдың граждандар халҡын варварҙарса бомбаға тота. Май аҙаҡтарында Нен-Дук (Куанг-Нен провинцияһы) ауылына һөжүм итеү ваҡытында Франция самолеттары 80 бомба ташлағандар. Һөҙөмтәлә бик күп кеше үлгән.

Үҙәк Вьетнамдың Төньяҡ өлөшөндә Тань-Иге районында ошо ай башында Франция самолеттары ауылдың тыныс халҡын шулай уҡ йылға аша сығыу урынында бомбаға тотҡандар, был ваҡытта 10 граждандың үлтергәндәр һәм яралағандар. Шулай уҡ 100-ҙән артығыраҡ йорт ... иткәндәр һәм бик күп һандағы джонкаларҙы һыуға батырғандар.

Иге-Ан (Үҙәк Вьетнам) провинцияһында Франция авиацияһының һөжүмө һөҙөмтәһендә быйылғы йылдың беренсе ... айы эсендә тыныс халыҡ араһында үлеүселәр һаны артҡан. 177 кеше үлтерелгән һәм 162 кеше яраланған. 400 йорт ... емерелгән.

Америка линкорының Ослоға килеүе

ОСЛО, 18 июнь. (ТАСС). Америка линкоры «Миссури» һәм уны оҙатыусы ... йөрөүсе база 18 июнда Ослоға килде.

Ибраһим АБДУЛЛИН

ҘУР ОТОШ

Һәр йылды өсөнсө майҙа, яңы заем сығарылыу тураһында радио аша хәбәр тапшырылғас, Хәбиб ағай контораһы беренсе булып ай ярымлыҡ хеҙмәт хаҡына заемға яҙыла ла урамға сыға. Ишек төбөндә, трамвай менән ҡайтырғамы, әллә йәйәү генә атларғамы, тип уйлап торғандан һуң, бер төрлө ҡарарға ла килмәй, ул тәмәке магазинына инеп «Северная пальмира» ала.

Бөгөн бер ниндәй байрам булмаһа ла ул «Северная пальмира» һатып алды һәм, ғәҙәттәгесә трамвайға ултырҙы. Ҡаланы беренсе ҡат күргәндәй, ул, малайҙар кеүек, башын тәҙрәнән сығарып, яңы йорттарға һоҡланып ҡарап барҙы. (Кондукторша: «гражданин, башығыҙҙы алығыҙ» тип уға ике тапҡыр иҫкәртеп тә ҡуйҙы). Ошо ҙур йорттарҙың бер нисә меңе кирбесе минең заем аҡсаһына эшләнгәндер, тип һөйөндө ул. Ни өсөн ҡапыл заем иҫкә төштө әле? Ә... эйе, эйе, бөгөн «Труд» газетаһында Өсөнсө государство заемының уйналыуы тураһында таблица килде.

Бына бөгөн дә ул алты тулырға ун минут ҡала эштән ҡайтты. Ғәҙәттә аш ашағандан һуң, сәй килгәнсе ун-ун биш минутлыҡ тәнәфес була. Хәбиб ағай зәңгәр ситле батист ҡулъяулығы менән күҙлеген һөртте лә газетаны өҫтәлгә һалды. Әлфиә ултырған һандыҡты асып, күп ғүмер иткәнлектән һары төҫән аҡһыл күккә үҙгәрткән картон папканан кәрәкле облигацияларын һайлап алды.

Әлфиәгә был ваҡыт ҡыҙыҡ була. Уның атайы әлеһән-әле облигацияларҙы цифрҙарҙы газеталағы әллә ниндәй цифрҙар менән сағыштыра. Уң ҡулының имән бармағы менән шул таблицаның өҫтөнән аҫтына тиклем йөрөтөп сыҡҡас, облигацияны уң яҡҡа алып ҡуя һәм шул ваҡытта уның һары мыйығының һул ҡанаты һикереп ала. Ни барҙыр инде шул таблицала. Ғөмүмән, һигеҙ йәшлек Әлфиә әле аҡсаның әһәмиәтен белмәй. Ниңә кәрәк уға аҡса. Ашарына-эсәренә бар, өҫтөнә башҡа ҡыҙҙарҙан кәм кейенмәй. Дәфтәрҙәре етерлек, киноға атайҙары менән бара. Барғанда-ҡайтҡанда атайы уны мороженый менән һыйлай. Бер ҡайғыһы ла юҡ уның. Уҡы ла уҡы. Бына бөгөн дә ул, үҙе яһаған сыбар одеялды һандыҡ өҫтөнә ябып ҡуйҙы ла, аяҡтарын бөкләп менеп ултырҙы. Дүрт облигация уң яҡҡа алып ҡуйылды һәм инде дүрт тапҡыр һары мыйыҡтың һул ҡанаты һикереп алды. Йоҡоһонан уянған һеңлеһе Нуриәгә баллы имеҙлек ҡаптырғандан һуң, әсәйе тағы комод янына килеп баҫты.

Әсәһе лә, Әлфиә кеүек, атайынан күҙен алмай. Күрәһең уға ла, оло булһа ла, атайының мыйығын һелкетеүе ҡыҙыҡтыр. Әлфиә үрелеп ҡарай. Ҡаралмаған ике облигация ҡағыҙы ҡалды. «Мыйығы тиҙерәк тағы ике тапҡыр таҙлыныһын ҡуйһа, вареньелап сәй эсер инек», тине ул әсәһән түҙемһеҙләнеп. Сеү, облигация ситкә алынып ҡуйылды. Мыйыҡ һелкенмәне. Атайы ышанмағандай итеп, башын ситкәрәк этәреп бер әлемға, бер таблицаға күҙ йүгертеп алғас, ни әлек Әлфиәгә боролоп ҡараны. Ни булған уға? Әсәһе лә ашығып килеп газетаны алды.

— Илле мең, Зифа!

— Китсә. Илле шул. Илле мең! Ҡыҙым илле мең сыҡҡан! — Әсәһе Әлфиәне күтәреп алып, еүеш әҙҙәр ҡалдыра-ҡалдыра суңылдатып үбә. Әлфиә көлөргә лә, иларға ла белмәй. Илле мең ни ул, күп буламы?

Кис Хәбиб ағайҙар бүлмәһендә ут ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ янды.

— Хәҙер аҡсаның хаҡы ҡиммәт, Зифа, бик күп нәмә алып булыр, — тине Хәбиб ағай. — Иртәгә хеҙмәт хаҡы бирәсәктәр. Мин алмайым. Барыһын да заемға түләйем.

Ревизор Хәбиб Хәсәновтың илле мең отоуы тураһында бөтә контора һөйләне, стена, өлкә газеталарында яҙып сыҡтылар. Һаҡлыҡ кассаһында, облигация Мәскәүҙән әйләнеп ҡайтыу менән хәбәр итербеҙ, тип, уның телефон номерен яҙып ҡалдылар.

Өлла шатлыҡ ҙур булғанға, ул биш көн ваҡыт бер ҡараһаң үтә оҙаҡ, икенсе ҡараһаң үтә тиҙ үткән кеүек тойолдо.

— Ваҡытығыҙ булһа беҙгә инеп сығығыҙ. Килде. — тинеләр Хәбиб ағайға һаҡлыҡ кассаһынан. Ул төп-төгәл алтынсы яртыла конторанан сыҡты һәм ун минуттан һаҡлыҡ кассаһына барып етте. Заем ҡаратыусылар күп түгел ине. Бөгөн генә сәсен көйҙөләткән ҡатынға ҡыҫҡа, ләкин ярымлы итеп «юҡ» тинеләр. Башында бер бөртөк тә ҡара сәсе булмаған, боронғоса кейенгән әбей облигацияларын һуҙҙы. Ул облигацияны тикшереүсе ҡыҙҙан күҙен алмай, йөрәк ауырыулы кеше һымаҡ йыш-йыш һулап, борсолоп көттө. Ҡыйын булһа ла, зәңгәр күҙле ҡыҙ «юҡ» һүҙен ҡабатланы. Әбей борсолоп өҫтәл янына барып ултырҙы һәм утыҙынсы йылдарҙа мода булған сыбыр тотҡалы ялтырап торған һары ридикюленән дүрткә бөкләнгән шаҡмаҡлы бер бит ҡағыҙ алып, «алмаштырманылармы икән» тигәндәй итеп облигация номерҙәрен шаҡмаҡлы ҡағыҙға яҙылған номерҙар менән сағыштыра башланы. Ҡапыл ул, ҡыҙҙарға хас булған етеҙлек менән торҙо ла, Хәбиб ағай янына килде.

— Бер облигациям юҡ. Барышня, һеҙҙә ҡалмағанмы?

Зәңгәр күҙле ҡыҙ, башын күтәрмәй генә, — юҡ, — тине. Әбей һиҙҙертеп борсолдо.

— Облигацияның бөтә номерҙарын да беләм. Ә бәрәү юҡ. Илле һумлығы ла түгел, ике йөҙ һумлығы. Номеры 041427, облигацияһы ун өс. Юғалттыммы икән ни? Эй... был ҡартлыҡты, ҡайҙа төшөрөп ҡалдырҙым икән?

Хәбиб ағай әбей әйткән номерҙе ишеткәс, утҡа баҫҡандай булып китте.

— Нисәнсе тиһегеҙ?

— Юғалған булғас ниңә уны ҡабатларға инде. Серияһы 041427, облигацияһы ун өс.

— Ә... ә... ауаҙынан башҡаны әйтә алманы Хәбиб ағай.

— Ғәфү итегеҙ, мин паспортымды онотҡанмын, — тип ул кассанан ашығып сығып китте.

Хәбиб ағай өйгә нисә минутта ҡайтып еткәнен дә иҫәпләмәне. Икенсе ҡатҡа йүгереп менеп, ишекте аяҡ башы менән асҡас та:

— Зифа, — тине ул батис ҡулъяулығы менән тирен һөртөп, һин бер ваҡытта ла облигация тапманыңмы? Ике йөҙ һумлыҡ.

— Юҡ. — Зифа ғәжәпләнеп тә, ҡаушап та һораны. — Ни булды?

Ул һаҡлыҡ кассаһында булған хәлде һөйләп бирҙе. Аҙаҡ үҙен ғәйепле кеше кеүек итеп, ҡулын тезенә һуҡты.

— Шулай эштәр. Үҙең беләһең, ике облигацияла бер төрлө серия номере булмай бит.

— Ҡайҙан беләһең, бәлки ул ҡарсыҡ бутағандыр.

— Бутарлыҡ әбей түгел ул, Зифа. Бер төргәк облигацияның һәр бер номерен яттан белә. Зифа, хәтерләп ҡара әле, әллә Әлфиәнең тапҡаны бармы?

— Һуң Әлфиә тапһа ла һандыҡҡа мин һалыр инем бит, Хәбиб. Юҡҡа көйәләнәһең, ҡарсыҡ номерын бутағандыр.

— Белмәйем, белмәйем, Зифа. — Ул костюмын һалып, сөйгә элде.

— Әлфиәне көтәйек.

Бәхеткә ҡаршы Әлфиә оҙаҡ көттөрмәне. Ул иптәш менән бөгөн булған яңылыҡтарҙы, күргән ҡыҙыҡтарҙы атайына түкмәй-сәсмәй һөйләргә тотондо. Хәбиб ағай ҡыҙы бер аҙ тынысланғас, һандыҡтан облигацияларҙы алды.

— Ҡыҙым, һинең бына ошондай ҡағыҙ тапҡаның юҡмы? — тип һораны.

Әлфиә облигацияға төкәлеп ҡарап торғандан һуң, ҡысҡырып ебәрҙе.

— Таптым. Тапҡайным. Ҡурсаҡ театрынан ҡайтҡанда. Ике яҡ мөйөшөнә ҙур итеп 200 цифры яҙылғайны.

Был һүҙ Зифаға нисек тәьҫир иткәндер, ләкин Хәбиб ағай ҡыҫыҡ кейемдә һалған кеше һымаҡ елкәләрен күтәреп алды.

— Ҡыҙым, әйт әле, һин уны ҡайҙа ҡуйҙың?

Табылған облигацияны оҙаҡ эҙләнеләр. Ҡаралмаған ер, аҡтарылмаған һандыҡ, сумаҙан ҡалманы.

Юҡ, табылған облигация табылманы. Зифа арып ултырһа ла, Хәбиб ағай икенсе, өсөнсө ҡат ҡаралған әйберҙәрҙе ҡараны, аҡтарылған сумаҙандарҙы аҡтарҙы.

Ул урамға сыҡҡанда сәғәт һигеҙҙе һуғырға ун биш минут ҡалғайны. Теләр-теләмәҫ кенә атлап барғанда, ул трамвайға ултырып маташыусы әбейҙе күреп ҡалды һәм инде вагон ҡуҙғалғас, подножкаға һикерҙе.

— Шул, шул облигация булғандыр.— Илле мең уға үлгәнсе йәшәргә етәсәк, тип уйланы ул. Бер әбейгә, бер яңы һалыныусы ҙур-ҙур биналарға ҡараны. Әбей оҙаҡ барманы. Революционный урамда төштө. Хәбиб ағай әбейгә тура ... «әбей, һеҙҙең облигацияны минең ҡыҙым тапҡан, хәҙер мин уға илле мең оттом. Әйҙәгеҙ отошто барып алайыҡ» тине. Әбей пенснэһен һалып, күҙен һөртө ...

— Рәхмәт, иптәш, — тине әбей, ... йыш һулап, — мин облигацияны ... тым. Ҡыҙымдың ҡыҙы Юлечка тыуған көнөндә ҡотларға аҡса булмағас, уға бүләк ... гәнмен икән. Бына, яҙып та ҡуйғанмын.

— Улайһа Юлечкағыҙ юғалтҡан... һеҙ бит серия 041427, номере ун өс ти ... негеҙ.

— Ун өс түгел, ун һигеҙ икән. ... ла 78 йыл йәшәп, беренсе тапҡыр ... ләндым. Ышанмаһағыҙ, бына ҡарағыҙ, яҙылып ҡуйылған. Унан ары Юлечканың облигация ла юғалтҡаны юҡ. ... һәҡ ҡыҙ.

Әбей иҫәнләшеп, ике ҡатлы ... кирбес йортҡа инеп китте.

Хәбиб ағай ике ут эсендә ... Әгәр Әлфиә тапҡан облигацияға ... булһамы? Һаҡлыҡ кассаһы ябылһа ... ине тигәндәй, йәйәү, ашыҡмайынса ... лап, ул һаҡлыҡ кассаһына китте.

Илле меңде алып ҡайтып еткәс ... арып бөттө. Аҡсаның ауырлығы ... ауыр уйҙар уны арытты. Берәйһе ... потында яҙылған номерҙар буйынса облигацияны ҡарар. Оттом, тип та ... ҡайтыр. Ҡайтһа... Ул кеҫәһендәге ... саны ҡапшап ҡараны. Ҡағыҙ аҡса ... мер кеүек, һалҡын тойолдо, ҡулы ... китте.

— Ҡасан ошо аҡса бөтөр, — тип ... эсенән.

Ҡапҡа төбөндә уны ҡыҙы Әлфиә ... тора ине. Ул һикергеләп:

— Атай таптым, таптым, был облигация. Әлфиә атаһына тауыш ... бөткән ике йөҙ һумлыҡ облигация ... һуҙҙы.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02523 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 250...

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се йыл сыға.

№121(8838)
1951 йыл
22 июнь
йома

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

МАРИЙ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ ПРЕЗИДИУМЫНА, МАРИЙ АССР-ының МИНИСТРҘАР СОВЕТЕНӘ, ВКП(б)-ның МАРИЙ ӨЛКӘ КОМИТЕТЕНӘ СССР МИНИСТРҘАР СОВЕТЕ ҺӘМ ВКП(б) ҮҘӘК КОМИТЕТЕНЕҢ ҠОТЛАУЫ (1-се бит).

Башҡорт АССР-ы Шишмә МТС-ы комбайнеры А. И. Кирәевкә Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы (1-се бит).

СССР Министрҙар Советендә. Яҙыусы П. А. Павленконың иҫтәлеген мәңгеләштереү тураһында (1-се бит).

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНДА (1-се бит).

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА (1-се бит).

В. Московский. — Һуғыш тоҡандырыусыларға бөйөк тарихи һабаҡ (2-се бит).

СССР СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТЕРСТВОҺЫНДА (2-се бит).

З. Нафиков. — Культура-ағартыу учреждениеларе эшенә даими етәкселек итергә (3-сө бит).

В. Ғирфанов. — Бойҙай сәсеүлектәрен тәрбиәләү саралары (3-сө бит).

Р. Хәсәнов. — Йәш талантлар (3-сө бит).

Тыныслыҡ өсөн, һуғышҡа һәм фашизмға ҡаршы (4-се бит).

Ибраһим Абдуллин. — Ҡәҙерле дуҫ (4-се бит).

Һайлауҙарҙың һөҙөмтәләре тураһында Франция коммунистар партияһының белдереүе (4-се бит).

БОРЕЙЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Урындағы Советтарҙың планлы һәм аныҡ эшләүҙәре өсөн

Яңы тип государство булған беҙҙең государствобыҙҙың принципиаль айырмаһы булып эшмә-эҙлекле совет демократизмы тора. Ысын халыҡ совет социалистик демократизменең бөйөклөгө государство власы органдарының түбәндән алып юғарыға тиклем халыҡ тарафынан һайланып ҡуйылған булыуында ғына түгел, беҙҙең илебеҙҙә государствоға идара итеү, социалистик общество төҙөү эшенә миллионлаған массаның тура-тура ҡатнашлыҡ итеүендә лә. Совет власының көсө — уның халыҡсан булыуында, Советтарҙың бөтә ойоштороу-массовый эшендә киң халыҡ массаларының актив ҡатнашлыҡ итеүендә.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтары, халыҡ массаларының көндән-көн үҫә барған активлегенә таянып, үҙҙәренең ойоштороу-массовый эштәрен һуңғы ваҡытта байтаҡ юғары күтәреүгә өлгәште. Улар ойоштороу-массовый эштәрҙе яҡшыртыуҙы эш планын төҙөүҙән, уны үтәүгә бөтә көстәрен һалыуҙан башлап ебәрҙеләр.

Эштең перспективаһын дөрөҫ билдәләү өсөн эштең үҙен яҡшы белергә, Совет ҡарамағында булған бөтә мөмкинлектәрҙе тәрән өйрәнергә кәрәк. Ләкин был перспектива дөйөм государство бурыстарына бәйләп, массаларҙың һорауҙарын, тәҡдимдәрен һәм тәжрибәләрен иҫәпкә алып билдәләнергә тейеш. Урындағы Советтарҙың эшен дөрөҫ планлаштырыу һәм план буйынса эшләү — нимә эшләргә һәм нинләй маҡсат менән эшләргә кәрәклекте белергә, иғтибарҙы төп бурыстарға туплаға һәм уларҙы уйлап хәл итергә кәрәк тигән һүҙ. Эште дөрөҫ планлаштырыу һәм ойоштороу Советтең эшмәкәрлеген активлаштыра, депутаттарҙы Совет эргәһенә тығыҙыраҡ туплай, уны массаларға яҡынлаштыра.

Беҙҙең илебеҙҙә пландар ҙур ойоштороусы көс булып торалар. Алдынғы Советтарҙың исполкомдары үҙҙәренең эштәрен бына шуны иҫәпкә алып планлаштыралар.

— Беҙ план төҙөгәндә, — тип яҙа Мәсетле районы Оло Аҡа ауыл Советы исполкомы председателе Шәриф иптәш Мортазин, — тормош етештереүҙе күтәреүгә, колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу, бөтә резервтарҙы файҙаланыу мәсьәләләренә айырыуса иғтибар бирәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта уҡыу-уҡытыу эштәре, культура-ағартыу, һаулыҡ һаҡлау, культуралы совет сауҙаһын ойоштороу мәсьәләләре лә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Совет эшмәкәрлегенең бөтә тармаҡтарын күҙ уңында тотоп, культура тормошо өсөн көрәш алдынғы урында булып тора.

Был ауыл Советы исполкомының эш планы иғтибарҙы төп бурыстарға туплауға юнәлдерә. Планда колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу, колхоз производствоһының бөтә тармаҡтарын үҫтереү мәсьәләләре төп урынды алып тора.

Черниковск, Ишембай ҡала һәм Күгәрсен район Советтарының эш планлаштырыуы яҡшы ҡуйылған. Был Совет исполкомдарының пландарында ҡаралған саралар киң һәм депутаттарҙың, активтың, Совет аппараты работниктарының алдан әҙерләнгән тәҡдимдәре нигеҙендә төҙөлә.

План төҙөгәндә улар был пландарҙың үтәлешен тикшереү методтарын ҡуя, билдәләнгән сараларҙың тормошҡа ашырылыуын тикшереүҙе кемгә йөкмәтеүҙе лә алдан билдәләйҙәр.

Мәҫәлән, Черниковск ҡала Советы исполкомының пландары һәр кварталға төҙөлә. Был план даими комиссияларҙың, бүлектәрҙең эш планынан сығып төҙөлә һәм ул исполком ултырышында киң актив һәм даими комиссияларҙың председателдәре ҡатнашлығында ентекле тикшерелеп раҫлана. Бында икенсе кварталдың апрель айында планды төҙөү, ултырыштарҙы әҙерләү эшенә 200-гә яҡын кеше, пландың үтәлешен тикшереү эшенә 53 кеше йәлеп ителгән. Шулай уҡ эш планында кеңдәң үҙәгендә торған мөһим мәсьәләләр ҙур урын алып торалар.

Эште дөрөҫ планлаштырыу—уға большевистик ойошҡанлыҡ һәм эшлеклелек индереү, иғтибарҙы төп бурыстарға юнәлдереү һәм уны депутаттарҙың һәм киң активтең яҡындан тороп ҡатнашлығында хәл итеү тигән һүҙ. Шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер урындағы Совет исполкомдарының эшен планлаштырыуҙа серьез етешһеҙлектәр бар әле. Миҫал өсөн Мишкә район Советы исполкомын алайыҡ.

Районның тәбиғи байлығы киң, экономикаһы төрлө. Ләкин улар иҫәпкә алынмай, эске мөмкинлектәрҙе файҙаланыу мәсьәләһе перспектив планға индерелмәй. Сөнки исполком етәкселәре был мөмкинлектәрҙе ныҡлап белмәйҙәр, уны өйрәнмәйҙәр. Район колхозларында ярҙамсы хужалыҡтарҙы, баҡсасылыҡты киңәйтеү мәсьәләләре ҡаралмай. Шуның өсөн бында бөтә шарттар булыуға ҡарамаҫтан, колхоздар баҡсасылыҡ менән шөғөлләнмәйҙәр. Районның үҙендә торф бар. Ләкин ул яғыулыҡ материалы итеп тә, ер ашлау өсөн дә һәм башҡа төрлө маҡсатҡа ла файҙаланылмай һәм киләсәктә файҙаланыу мәсьәләһе планлаштырылмай ҙа. Алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен производствоға индереү, уны популярлаштырыу мәсьәләләре планда сағылдырылмайҙар. Культура-ағартыу учреждениеларенең, сауҙа ойошмаларының эшен яҡшыртыу мәсьәләләренә тейешле урын бирелмәй. Шуға күрә лә районда культура-ағартыу эше сиктән тыш насар тора. Культура үҙәге булырға тейешле колхоз клубы келәт хеҙмәтен үтәй.

Насар планлаштырыу факты шулай уҡ Бөрө, Ғафури, Ҡандра район Советтары исполкомдарының эш практикаһында ла бар. Был Советтарҙың даими комиссиялары исполкомдар тарафынан эш планын төҙөүгә йәлеп ителмәй.

Әммә пландың булмауы, эштәрҙең ойошмаған булыуы, эштә артта ҡалыуға килтерә, работниктарҙың энергияһы бушҡа әрәм була, перспективаларҙы аныҡ күрмәй, эштең етешһеҙлектәре тиҙ арала бөтөрөлмәй.

Урындағы Советтар алдында торған иң ҙур бурыстар эште планлаштырыу практикаһын юғары кимәлгә күтәреүҙе талап итә. Планлаштырыуҙы дөрөҫ ойоштороу төп звеноларҙы табырға, иғтибарҙы төп маҡсатҡа, хәл итеү бурысына туплауға булышлыҡ итә. Планлы эшләү эштәге тәртипһеҙлекте бөтөрөүгә, эш стилен яҡшыртыуға ярҙам итә.

Еңеү бер ваҡытта ла үҙенән-үҙе килмәй, — уны яуларға кәрәк. Дөрөҫ линия билдәләнгән һуң, мәсьәләне дөрөҫ хәл итеү юлдары табылғандан һуң, эштең барышы ойоштороуға, кешеләрҙе дөрөҫ һайлауға, етәкселәрҙең ҡарарҙарының үтәлешен тикшереүгә бәйле, — тип өйрәтә иптәш Сталин.

Планлаштырыу эшенә, үтәлеште тикшереүгә иғтибар көсәйтеү исполкомдарҙың эшмәкәрлегенә ҙур айырым йөкмәткелек бирер, уларҙың етәкселек эшенең культураһын күтәрер, урындағы Советтарҙың эшен юғары кимәлгә күтәрергә булышлыҡ итер.

Партияның район комитеттары урындағы Советтарҙың планлаштырыу эшендә тейешле күрһәтмәләр бирергә һәм пландың үтәлешенә контроллек итергә бурыслылар.

Социалистик Тыуған илебеҙҙе тағы ла нығытырбыҙ

Бүздәк. Күзәй МТС-ы механизаторҙары социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан нығытыу өсөн бөтә көс, ҙур күтәренкелек менән эшләйҙәр.

МТС зонаһындағы бөтә колхоздарҙа ла мул урожай үҫтерелә. Механизаторҙар һәм колхоз члендәре үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәренең емештәрен ауыл хужалығы артелдәренең баҫыуҙарында күреп шатланалар. «Ҡыҙыл Байраҡ», «Крестьянин» колхоздарында, Маленков, Карл Маркс, Калинин исемендәге ауыл хужалығы артелдәрендә арыш һәм һабан ашлыҡтарҙың үҫеше бигерәк тә яҡшы. Арыштың буйы атты күмә, һәр гектарынан 25 — 30 центнер урожай көтөлә.

МТС коллективы был мул урожайҙы урып-йыйырға әҙер. Комбайндар, ауыл хужалығы машиналары ремонтланып бөттө. Ремонтта комбайнер Минзариф Хәлимов бригадаһы беренселекте алды.

Комбайнерҙар Ф. Шәмсетдинов, С. Капалов, Н. Сәйетгәрәев, Ф. Шабаева, Нурмөхәмәтов иптәштәр урожай йыйнауҙы юғалтыуһыҙ башҡарырға, сезон планын 180 — 240 процентҡа үтәргә, яғыулыҡҡа экономия яһарға һөкләмә алдылар. Улар комбайндар менән колхоздарға киттеләр.

— Беҙ мул урожайҙы ҡыҫҡа срокта, юғалтыуһыҙ йыйнап алырбыҙ. Коллективыбыҙ быға тулыһынса әҙер. Был беҙҙең Совет государствоһын артабан нығытыу өсөн вклад булыр. Был — яңы һуғыш уты тоҡандырырға маташыусы Англия, Америка империалистарына удар булыр,— ти МТС директоры иптәш Сәитов.

Марий АССР-ы Верховный Советенең Президиумына
Марий АССР-ының Министрҙар Советенә
ВКП(б)-ның Марий Өлкә Комитетенә

ССР Союзы Министрҙар Советы һәм Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) Партияһының Үҙәк Комитеты республиканың төҙөлөүенә утыҙ йыл тулыуҙы байрам итеү көнөндә Марий Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы эшселәрен, колхозсыларын, интеллигенцияһын һәм бөтә хеҙмәтсәндәрен ҡотлайҙар.

Совет иле халыҡтарының туғандаш семьяһында Марий республикаһының хеҙмәтсәндәре коммунистар партияһы етәкселегендә Совет власы йылдарында хужалыҡ һәм культура төҙөлөшендә байтаҡ уңыштарға өлгәштеләр. Элек артта ҡалған край булып иҫәпләнгән республикала урман, ҡағыҙ һәм аҙыҡ промышленносы, шулай уҡ промышленностең башҡа тармаҡтарының эре предприятиелары төҙөлделәр һәм уңышлы эшләйҙәр. Алдынғы машина-техникаһы менән байыҡтырылған социалистик ауыл хужалығы үҫә һәм нығый.

Хеҙмәтсәндәрҙең материаль-көн күрештәре тайпылышһыҙ күтәрелә. Ленинсе-сталинсе милли политика марий халҡы культураһының сәскә атыуын тәьмин итте. Республикала грамотаһыҙлыҡ бөтөрелде, дөйөм ете йыллыҡ уҡыу тормошҡа ашырыла, юғары һәм урта уҡыу йорттары булдырылды, культура-ағартыу һәм медицина учреждениеларенең киң селтәре йәйелдерелде.

ССР Союзы Министрҙар Советы һәм Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) Партияһы Үҙәк Комитеты Марий Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының хеҙмәтсәндәре киләсәктә лә промышленностең, ауыл хужалығының һәм үҙҙәренең республикаһының культураһының яңы күтәрелеше өсөн коммунизмға табан ышаныс менән барыусы беҙҙең бөйөк социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан нығытыу өсөн тағы ла ҙурыраҡ ныҡышмалылыҡ менән көрәшәсәктәренә ышаныс белдерәләр.

ССР Союзы
Министрҙар Советы

Бөтә Союз Коммунистар
(большевиктар) Партияһы
Үҙәк Комитеты

Башҡорт АССР-ы Шишмә МТС-ы комбайнеры А. И. Кирәевкә Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреү тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы
УКАЗЫ

СССР Верховный Советы Президиумының 1950 йылда бөртөклө ашлыҡ культуралары һәм үлән орлоҡтары урожайын йыйнауҙа һәм һуғып алыуҙа **юғары күрһәткестәргә өлгәшкәне өсөн** 1950 йылдың 27 апрель Указына ярашлы рәүештә Шишмә МТС-ының «Сталинец—1» комбайны менән 35 эш көнөндә урылған майҙандан 8441 центнер бөртөклө ашлыҡ культуралары һәм 66 центнер үлән орлоғо һуғып алыусы комбайнер Арслан Идият улы **Кирәевкә, Ленин** орденын һәм «Ураҡ һәм сүкеш» алтын медален тапшырыу менән, **Социалистик Хеҙмәт Геройы** исемен бирергә.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе
Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Советы Президиумы Секретары
А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль, 20 июнь, 1951 йыл.

СССР Министрҙар Советендә

Яҙыусы П. А. Павленконың иҫтәлеген мәңгеләштереү тураһында

ССР Союзы Министрҙар Советы ҡарар итте:

1. Яҙыусы Петр Андреевич Павленконың ҡәберенә һәйкәл һалырға.

2. Художестволы әҙәбиәт Государство издательствоһына 1952—1953 йылдарҙа П. А. Павленконың әҫәрҙәр йыйынтығын сығарыуҙы тапшырырға.

3. П. А. Павленконың семьяһына 25 мең һум күләмендә (ҡатыны Наталия Константиновна Треневаға 20 мең, туғаны Елена Сергеевна Корольковаға 5 мең һум) бер ваҡытлы пособие бирергә.

4. П. А. Павленконың ҡатыны — Наталия Константиновна Треневаға 1951 йылдың 1 июленән башлап айына 750 һум күләмендә ғүмерлек персональ пенсия билдәләргә.

5. П. А. Павленконың туғаны — Елена Сергеевна Корольковаға 1951 йылдың 1 июненән башлап айына 500 һум күләмендә ғүмерлек персональ пенсия билдәләргә.

6. П. А. Павленконың балалары — 1936 йылда тыуған Алексей Петрович Павленкоға һәм 1939 йылда тыуған Андрей Петрович Павленкоға юғары белем алыуҙы тамамлағанға тиклем һәр берeһенә айына 500 һум күләмендә персональ пенсия билдәләргә.

7. П. А. Павленконы ерләүҙе государство иҫәбенә алырға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы үҙенең ултырышында «Дыуан район Советы исполкомының ауыл Советтарының етәксе кадрҙары менән эше тураһында» район Советы исполкомы председателе иптәш Г. М. Тимченконың докладын тыңланы һәм был өлкәлә район Советы исполкомының эшендә ҙур етешһеҙлектәр булыуын билдәләне.

Урындағы Советтарға һайлауҙар үткәндән һуң ауыл Советтары председателдәренең, председатель урынбаҫарҙарының һәм секретарҙарының 50 проценты Совет эшенә беренсе тапҡыр килделәр. Шуға ҡарамаҫтан, район Советы исполкомы улар өсөн семинарҙар үткәрмәй, йәки бик һирәк һәм әҙерлекһеҙ үткәрә. Семинарҙарҙа ауыл Советтарының эшен планлаштырыу, алдынғы Советтарҙың, даими комиссияларҙың эш тәжрибәләрен уртаҡлашыу, ауыл Советтары сессияларында, исполком ултырыштарында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшереү кеүек, мөһим мәсьәләләр, шулай уҡ государстволы хоҡуҡ кеүек, теоретик мәсьәләләр яҡтыртылмайҙар. Советтарҙың ойоштороу-массовый эштәре, социалистик ярыш мәсьәләләре өҫтән-өҫтән генә яҡтыртыла, лекциялар һәм докладтар түбән кимәлдә үткәрелә.

Район Советы исполкомы ауыл Советтарының етәксе кадрҙарын уҡытыу эшен ойоштормаған. Районда ауыл хужалығы техникумы, уҡытыусылар институты булһа ла, ауыл Советтарының етәксе кадрҙары ситтән тороп уҡыуға йәлеп ителмәгәндәр.

Район Советы исполкомы работниктары урындарҙа булмайҙар, ауыл Советы работниктарына тейешле практик ярҙам күрһәтмәйҙәр һәм ауыл хужалығын күтәреү, колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау һәм төҙөкләндереү мәсьәләләрен хәл итеүҙә Советтарҙың ойоштороусанлыҡ ролен күтәрмәй.

Ауыл Советтарының етәксе кадрҙарын бер урында даими эшләтеүгә район Советы исполкомы тарафынан аҙ иғтибар бирелә.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙы етәксе совет эшенә үрләтеүгә тейешле баһа бирелмәй. Районда ауыл Советтары председателдәре һәм председатель урынбаҫарҙары булып бер генә ҡатын-ҡыҙ ҙа эшләмәй. 18 ауыл Советы секретарының 5-еһе генә ҡатын-ҡыҙ.

Ауыл Советтарының эшен район Советы исполкомы һирәк тикшерә, уларҙың эшмәкәрлегенә тәрән анализ яһамай, һәм ҡағыҙға булараҡ, хужалыҡ-политик кампанияларҙы үткәреүгә бәйләнгән айырым мәсьәләләрҙе ҡарау менән сикләнә. Советтарҙың эшен яҡшыртыуға юнәлтелгән конкрет ҡарарҙар ҡабул ителмәй һәм үтәлешен тикшермәү һөҙөмтәһендә күп ҡарарҙар йыш ҡына тормошҡа ашырылмай ҡалалар.

Сессиялар үткәреү протоколдарын тикшереү ойошторолмаған, уға бер нинди күрһәтмә һәм иҫкәртеүҙәр яһалмаған.

Ауыл Советтары депутаттар менән эшләмәйҙәр, уларҙың активлегын күтәрмәйҙәр. Сессияла тикшерелә торған мәсьәләләр буйынса депутаттар һирәк сығыш яһайҙар, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү насар йәйелдерелгән, шуға күрә лә Советтең эшендә булған етешһеҙлектәр асылмай ҡалалар.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Дыуан район Советы исполкомының һайлаусылар тарафынан индерелгән наказдарҙы насар үтәүен, район һәм ауыл Советы депутаттарының үҙ округтарында аҙ булыуҙарын, һайлаусылар алдында отчет биреп бармауҙарын, депутатлыҡ бурыстарын үтәүҙә уларға Советтарҙың ярҙам итмәүҙәрен билдәләй.

Президиум шулай уҡ ауыл Советтарының етәксе кадрҙары менән район Советы исполкомының эшен ҡәнәғәтләнмәҫлек тип тапты, һәм түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итте:

Ауыл Советтарының етәксе кадрҙары менән эште ҡырҡа яҡшыртырға, ауыл Советы председателдәре һәм секретарҙары өсөн инструктив кәңәшмәләр үткәреп, унда Советтарҙың эшен планлаштырыу, ауыл Советтарының һәм уларҙың даими комиссияларының тәжрибә уртаҡлашыуҙары, сығарылған ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшереү һәм ойоштороу-массовый эштәр тураһындағы мәсьәләләрҙе ҡуйып тикшерергә, семинарҙарҙа уҡылған лекцияларҙың һәм докладтарҙың идея-теоретик яҡтан юғары кимәлдә булыуҙарына өлгәшергә кәрәк.

Ауыл Советтары етәксе кадрҙарының эш квалификацияларын күтәреү маҡсатында уларҙы уҡытыу эшен ойоштороуға, ауыл Советы председателдәре һәм секретарҙарын ситтән тороп уҡыуға йәлеп итеүгә серьез иғтибар бирелергә тейеш.

Ауыл Советтарында етәксе эшкә үрләтеү өсөн тейешле резерв булдырырға, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, йәш депутаттарҙы етәксе совет эшенә киң йәлеп итеүгә айырыуса иғтибар бирергә кәрәк.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы район Советы исполкомынан ауыл Советтарының етәксе кадрҙарын бер урында нығытыуҙы, уларҙы депутат булмаған кешеләр менән алыштырыуға юл ҡуймауҙы, уларға практик эштә ярҙам ойоштороуҙы талап итте.

Советтарҙың ойоштороу-массовый эшен бөтә саралар менән көсәйтергә, депутаттар менән планлы эшләүгә, уларҙың һайлаусылар араһында активлеген күтәреүгә, отчеттарын ойоштороуға, даими комиссияларҙың эшен яҡшыртыуға айырыуса ныҡ иғтибар биреү талап ителә.

Советтарҙың сессияларын үҙ ваҡытында йыйнап, уларҙа хужалыҡ-культура төҙөлөшөнөң мөһим мәсьәләләрен тыңларға, тәнҡит, үҙ-үҙеңде тәнҡитте киң йәйелдерергә кәрәк.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Өфө ҡалаһының 8-се март исемендәге тегеү фабрикаһы коллективы 1951 йыл планын срогынан алда үтәү өсөн көрәшә.

Һүрәттә: (һулдан уңға) фабриканың стахановкалары К. Трухина һәм Р. Баһаутдинова иптәштәр. Улар үҙҙәренең смена нормаларын 200 процентҡа еткереп үтәйҙәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Комбайндарҙы ремонтлау тамамланды

Йомағужа. Подгорный МТС-ы механизаторҙары социалистик ярыш йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр. Яҙғы сәсеү, пар һөрөү һәм урожай йыйнауға әҙерлек эштәре үҙ ваҡытында, юғары сифатлы итеп үткәрелде.

МТС коллективы быйыл комбайндар ремонтлауҙы 15 июнгә тамамларға йөкләмә алғайны. Ремонтсыларҙың һүҙҙәре эштән айырылманы. 10 июнгә 21 комбайн юғары сифатлы итеп ремонтланды. МТС шулай уҡ быйыл яңы комбайндар ҙа алды. Хәҙер бөтә комбайндар урожай йыйнауға әҙер.

Комбайндарҙы ремонтлауҙа Байғусқаров, Петров, Яппаров һәм Понкратов иптәштәрҙең ремонт бригадалары көндәлек нормаларын системалы 140 — 180 процентҡа үтәнеләр.

Бөтә комбайндар государство комиссияһы тарафынан ҡабул ителделәр. Улар хәҙер колхоздарға оҙатылалар.

Алдынғы комбайнер Зәки Байғусқаров «Сталинец—6» комбайны менән быйылғы сезонда 1200 гектар, Ғафи Яппаров, Николай Петров һәм Юлдашев иптәштәр «Сталинец — 6» комбайны менән 1000-әр гектар, Ҡорбан Яппаров «Сталинец — 1» комбайны менән 800 гектар, комбайнер Ясмолев үҙе йөрөй торған комбайн менән 500 гектар майҙандың урожайын йыйырға йөкләмә алдылар.

Ғ. Вахитов.

Ҡыҙыҡлы табыш

Бәйрәкәй районы мәктәптәренең уҡыусылары уҡыу йылын уңышлы тамамлап, Тыуған илде өйрәнеү буйынса төрлө туристик экскурсиялар һәм походтар үткәрәләр. Быңда 7 меңдән артығыраҡ уҡыусы ҡатнаша.

Күптән түгел уҡытыусы иптәш Бабынышев етәкселегендә Кривля-Илюшкин мәктәбе уҡыусылары Йомағужа районының Знаменка ауылына яҡын Кривая йылғаһы башланған урында ҡыҙыҡлы табышҡа осранылар. Улар бында боронғо мамонттың 1 метр 18 сантиметр оҙонлоғондағы ҡаҙыҡ тешен таптылар. Ҡаҙыҡ тештең ауырлығы 5 килограмм. Шулай уҡ мамонт һөйәгенең башҡа өлөштәре лә табылды. Ул өлкәләмәй музейға ебәреләсәк.

Ғ. Нусарбаев.

Яғыулыҡҡа ҙур экономия яһайылар

Раевка депоһының машинистары тимер юлсыларҙың сталинсе көнөнә производство бүләктәре әҙерләйҙәр.

Май айында ике араһағы станцияларҙа һыу алырға туҡтатмайынса бик күп поездар үткәрҙеләр. Быларҙың бөтәһе лә 500 тонна күмергә экономия яһарға мөмкинлек тыуҙырҙы.

Машинистарҙан Белоусов, Сыроежкин һәм Шестеров иптәштәрҙең бригадалары айырыуса яҡшы уңыштарға өлгәштеләр.

Июнь айының беренсе декадаһында бөтә бригадаларҙа ла тип әйтерлек яғыулыҡҡа экономия яһалды.

Д. Егоров.

Һуғыш тоҡандырыусыларға бөйөк тарихи һабаҡ

Бынан ун йыл элек, 1941 йылдың 22 июнендә, гитлерсы Германияның фашистик армияһы һөжүм итмәү тураһындағы пактты мәкерле рәүештә боҙоп, СССР сиктәренә үтеп инде.

Гитлерселар СССР-ға ҡаршы һуғышты фашистик Германия өсөн уңайлы шарттарҙа башланылар. Германияны СССР-ға ҡаршы йүнәлтергә бөтә көстәре менән тырышыусы, баҫып алыуға ынтылыуҙа Гитлерҙы һәр яҡлап дәртләндереүсе АҠШ, Англия, Франция империалистарының хыянатсыл роле арҡаһында фашистар икенсе бөтә донъя һуғышын башланыуға ҡеүәтле хәрби машина булдыра алдылар.

Америка-Англия империалистары совет халҡын гитлерселар көсөк үк, күрә алмаһылар һәм күрә алмайҙар. Улар, гитлерселар көсөк үк, социализм иленең еңеүҙәре, бөтә донъяла эшселәр синыфының революцион хәрәкәтенең уңыштары менән үлемесле ҡурҡыуға төшкәйнеләр. Социализм илен күрә алмау, унан ҡурҡыу бөтә илдәрҙең империалистарын Советтар Союзына ҡаршы көрәшкә берләштерҙе. Донъя реакцияһы лагерында төп удар көс роле фашистик Германияға бирелде. СССР-ға һөжүм итеү маҡсатында уны ҡоралландырыу Америка монополияларының тура-туранан ҡатнашлығында барҙы. АҠШ, Англия, Францияның идара итеүсе түүҙары, монополистар тәрбиәсенә хеҙмәт иткән хәлдә, үҙ халыҡтарының милли интерестарына хыянат иттеләр. Улар фашистик Германияны танкылар, самолеттар менән байыҡтырыу өсөн средстволарын ҡыҙғанмайынлар. Үҙҙәренең СССР-ҙы изоляциялауға булған сәйәсәтле политикаларында уңышһыҙлыҡҡа осрап, Англия менән Франция гитлерселарға Австрияны, Чехословакияны, Польшаны баҫып алыуға, Көнбайыш Европа һәм Балҡан илдәренең халыҡтарын ҡол итеүгә ярҙам иттеләр. АҠШ, Англия, Францияның һәм башҡа күп кенә илдәрҙең империалистик идара итеүселәре Европаны церемониаль марш менән үтеүгә гитлерселарға юл ҡуйҙылар. Францияның идара итеүселәре «үҙҙәрен революция шаулаһы менән ҡурҡытыуға ирк биреп, ҡаршылыҡ күрһәтеүҙән баш тартып, ҡурҡыштарынан үҙҙәренең тыуған илен Гитлерҙың аяғы аҫтына һалдылар» (И. Сталин. «Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында», 5 баҫма, 21-се бит).

Көнбайыштағы еңел уңыштарҙан иҫергән фашистар үҙҙәрен бөтә ер шарының хакимдәре итеп күрә башлағайнылар инде. Хәҙерге һуғышта авиация һәм танкыларҙың хәл иткес роль уйнауы тураһындағы араҡыҙ хәрби доктринаға таянып, герман военщинаһы СССР-ға ҡаршы һуғышты ай ярым—ике айҙа еңеүле тамамларға иҫәп тотто. Ләкин дошман беҙҙең көстәребеҙҙе лә һәм үҙ мөмкинлектәрен дә баһалауҙа ныҡ яңылышты.

* * *

Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көндәренән үк, беҙҙең Тыуған илебеҙ өҫтөнә уның фашистар тарафынан ҡол ителеүе ҡурҡынысы тыуғас, СССР-ҙың Ҡоралды Көстәренә етәкселекте И. В. Сталин алды. Иптәш Сталин совет халҡының гитлерсе Германияға ҡаршы көрәшен ойоштороу һәм беҙҙең Тыуған илебеҙҙе бөтә донъя әһәмиәтле тарихи еңеүгә килтерҙе.

Иптәш Сталин үҙенең 1941 йылдың 3 июлендә совет халҡына, армиябыҙҙың һәм флотыбыҙҙың боецтарына һәм командирҙарына мөрәжәғәт итеп һөйләгән тарихи телмәрендә совет халҡының гитлерсе баҫҡынсыларға ҡаршы көрәшенең боевой программаһын билдәләне. «Был Ватан һуғышының маҡсаты — илебеҙ алдына килеп баҫҡан ҡурҡынысты бөтөрөү генә түгел, бәлки герман фашизмының иҙеүенән яфа сигеүсе бөтә Европа халыҡтарына ла ярҙам итеү», тип күрһәтте (шунда уҡ, 16-сы бит).

1941 йылдың июненән алып 1942 йылдың көҙөнә тиклемге осорҙа Совет Армияһы контратакалар һәм контрһөжүмдәр менән бергә үткәрелгән актив оборонала фашистик армияның удар көсөн һындырҙы, гитлерсе йәшен тиҙлегендәге һуғыш стратегияһын ерләне.

Советтар Союзының фашистик Германияға ҡаршы Бөйөк Ватан һуғышының азатлыҡ һуғышы булыуы, уның маҡсаты СССР алдына килеп баҫҡан ҡурҡынысты ғына бөтөрөү түгел, бәлки Европаның герман фашизмы иҙеүе аҫтында яфаланыусы бөтә халыҡтарға ла ярҙам итеүҙән тороуын донъяның бөтә ябай кешеләре аңлай инеләр. Халыҡтар, тәбиғи рәүештә, АҠШ, Англия, Францияның Гитлерҙы һәм уның бандаһын һүҙҙә хурлаусы идара итеүселәре дөйөм дошманды тиҙерәк тар-мар итеүҙә Советтар Союзына ғәмәлдә ярҙам күрһәтерҙәр, тип көттөләр. Ләкин был эшләнмәне. АҠШ, Англияның Гитлерға ҡаршы коалицияға инеүе һис тә был государстволарҙың идара итеүселәренең изге теләге буйынса эшләнмәне. Улар халыҡ массаларының ҡыҫымы арҡаһында был аҙымды яһарға мәжбүр булдылар. Ләкин был уларға, фашизмды күрә алмауҙары, союзниклек бурысы тураһындағы ике йөҙлө декларацияларға йәшеренеп, үҙ халыҡтарының ихтыярына ҡаршы, икенсе фронт асыуҙы һуҙыуға ҡамасауламаны.

Хәҙер инде Уолл-стриттең ялсы агенттарының планы ниндәй мәкерле булғанлығы бөтә прогрессив кешелек донъяһына билдәле. Уларҙың СССР-ҙы көсһөҙләндереүгә, беҙҙең кеше һәм материаль көстәребеҙҙе бөтөрөүгә ынтылыуҙары, һуңынан үҙҙәренең хыянатсыл политикаларының өмөттәрен йыйнарға теләүҙәре документтар менән иҫбат ителде. Ләкин аҡыллы сталинсе стратегия донъя реакцияһының пландарын емерҙе.

Общественный үсеш закондарын дөрөҫ аңлауға нигеҙләнгән сталинсе хәрби фән гитлерселарҙың һәм уларҙың булышсыларының — черчилляарҙың, трумэндарҙың, маршалльдарҙың һәм улар көсөктәренең хәрби доктриналарынан үҙенең тулыһынса өҫтөнлөгөн күрһәтте.

Бөйөк Сталин етәкселек иткән Совет Армияһы гитлерсе полчищаларҙы тар-мар итте. Еңеү байрағы Берлинда еңелгән рейхстаг өҫтөнә эленде. Совет халҡы, уның армияһы бөтә донъя әһәмиәтле тарихи еңеүгә өлгәштеләр, донъяла беренсе социализм илен ҡот осҡос ҡурҡыныстан ҡотҡарҙылар, бөтә прогрессив кешелек донъяһын фашист варварҙарынан ҡотҡарҙылар.

Англия-Америка һуғыш тоҡандырыусыларының хәҙер, ваҡыт үткәндән һуң, тарихты боҙоп күрһәтеп, Совет Армияһының Волгала һуғышып Темзаны ҡотҡарыуын, 1945 йылдың ғинуарында Балтиканан Карпатҡа тиклемге бөтә фронтта уларҙың көсө буйынса ығасы булмаған һөжүмде башлап совет воиндарының Арденна районында Америка, Англия ғәскәрҙәрен ҡыйратыуҙан ҡотҡарып ҡалыуҙарын донъя халыҡтарынан йәшерергә маташыуҙары юҡҡа ғына.

Бергәләп һуғышыусы государстволарҙың союзниклек мөнәсәбәттәренең тарихендә, моғайын, икенсе фронтты асыуға һәр төрлө ҡамасаулаусы черчиллдәр һәм улар көсөктәр тарафынан яҙылған көсөк, хурлыҡлы бит башҡа булмағандыр. Совет ғәскәрҙәре Германияла ҡулға төшөргән документтар 1941 йылдың көҙендә, шулай уҡ 1942 һәм 1943 йылдарҙа Лиссабонда һәм Швейцарияла СССР-ҙан башҡа һәм СССР-ҙан йәшерен Англия менән Германия вәкилдәре араһында, ә һуңынан Америка Ҡушма Штаттары менән Германия араһында сепарат ярашыу төҙөшөү тураһында һөйләшеүҙәр алып барылғанлығын күрһәтәләр. 1943 йылдың февралендә Швейцарияла был һөйләшеүҙәрҙе Джон Фостер Даллестең туғаны — Аллен Даллес алып барған, ул «Балл» исеме аҫтында йәшеренеп йөрөгән һәм уның «Аҡ йорттан поручениеләре һәм полномочиеләре булған».

Англия-Американың көнбайыштағы һуңлап башланған операциялары сикләнгән характерҙа булды һәм иң киткес ҡыйыуһыҙлыҡ менән башҡарылдылар. Советтар Союзына ҡаршы күберәк дивизиялар күсереүгә Гитлерға мөмкинлек биреү өсөн бөтә нәмә эшләнде. Һәм һуғыштың һуңғы көндәренә тиклем Гитлер армияһының төп көстәре совет-герман фронтында булды. 1949 йылда Көнбайыш Германияла фашистик Германияның элекке ҡоро ер көстәре начальнигы генерал Гальдерҙың китабы баҫылып сыҡты. «Полководец булыу яғынан Гитлер» тигән был китапта көнбайышта Германияның етди оборона тотмауы, аманаты сыҡҡан «Зигфрид линияһының» психологик фактор ролен генә уйнауы күрһәтелә. «Атлантик вал союзниктар десантын төшөрөүҙе күпме лә булһа етди тотоп тора алмаҫ ине».

Икенсе фронттың, атап әйткәндә, һауалағы икенсе фронттың хәл иткес роле тураһындағы әкиәт бәхәсһеҙ документтар менән фаш ителде. Икенсе бөтә донъя һуғышының бөтә ауырлығын Советтар Союзы күтәреүен, уның гитлерсе Германияға ҡаршы бергә-бер һуғыш алып барыуын прогрессив кешелек донъяһы белә.

* * *

Бөйөк Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә, иптәш Сталиндең баш командованиеһы аҫтында совет халҡы өлгәшкән еңеүҙең бөтә донъяла тарихи әһәмиәте бар. Донъялағы капиталистик системаға ғәйәт ҙур юғалтыу килтерелде. Тыныслыҡ, демократия һәм социализмдың ҡеүәтле фронты үҫеп сыҡты. Польша, Чехословакия, Венгрия, Румыния, Болгария, Албания капиталистик системанан төшөп ҡалдылар. Совет Армияһы был илдәрҙең халыҡтарына иҫке донъяның ҡоллоғонан ҡотолоуға һәм ышаныс менән социализм төҙөү юлына баҫырға ярҙам итте. Башында иптәш Мао Цзэ-дун торған данлыҡлы боевой коммунистар партияһы етәкселегендә героик Ҡытай халҡы тарихи еңеүгә өлгәште. Беҙҙең халҡыбыҙ, гитлерсе Германияны һәм империалистик Японияны еңеп, үҙ Тыуған илен ҡотҡарыу менән генә ҡалманы, бәлки Көнсығыш Европа халыҡтарын фашизм иҙеүенән азат итте, уларға яңы тормош юлына, социализм төҙөү юлына баҫырға ярҙам итте.

Буржуаз матбуғат ниндәйҙер мөғжизә тураһында, уның ярҙамында Советтар Союзы еңгән мөғжизә тураһында күп яҙҙы һәм әле лә яҙа. Совет халҡы донъя реакцияһының ҡара көстәрен беҙҙең социалистик общество һәм государство ҡоролошоноң өҫтөнлектәре арҡаһында еңде. «Октябрь революцияһы тыуҙырған социалистик ҡоролош, — тип күрһәтә иптәш Сталин,—беҙҙең халҡыбыҙға һәм армиябыҙға бөйөк һәм еңелмәслек көс бирҙе» (шунда уҡ, 158—159-сы биттәр).

Совет государство ҡоролошоноң бөйөк өҫтөнлектәрен һуғыш тағы ла бер тапҡыр күрһәтте. Беҙҙең күп милләтле Совет государствоһы һуғыштың бөтә һынауҙарына сыҙаны һәм үҙенең йәшәүгә һәләтле булыуын күрһәтте. Халыҡтар араһында дуҫлыҡ һәм туғандарса хеҙмәттәшлек тойғоларын үҫтереүсе Совет государство ҡоролошо күп милләтле государствоның өлгөһө булып сыҡты. Беҙҙең дошмандарыбыҙҙың совет халыҡтарының ленинсе-сталинсе дуҫлыҡтарының ныҡ булмауына өмөттәре емерелде. Гитлерселарҙың һәм уларҙың англо-американ әйәрсендәренең өмөттәренә ҡарамаҫтан, Советтар Союзының халыҡтары бөйөк рус халҡы етәкселегендә үҙҙәренең социалистик Ватандарын яҡлауға күтәрелделәр. Фашистарҙың совет тылының ныҡ булмауына иҫәп тотоуҙары юҡҡа сыҡты.

Совет государствоһы Ҡоралды Көстәренең ҡеүәтен баһалауҙа ла дошман яңылышты. «Һуғыш,—тип күрһәтә иптәш Сталин, — Ҡыҙыл Армияның «балсыҡ аяҡлы колосс» түгеллеген, ә беҙҙең заманыбыҙҙың тамам хәҙерге заман ҡоралланышлы, иң тәжрибәле командасостав һәм юғары мораль-боевой сифаттары булған, беренсе класлы армия икәнлеген күрһәтте».

Совет воиндары бөтә донъяға массовый героизм, һуңмаслыҡ һөжүм итеү рухын, юғары хәрби оҫталыҡты күрһәттеләр.

Бөйөк Ватан һуғышы—сталинсе хәрби фәндең триумфы, уның герман империализмының реакцион доктринаһына ҡарағанда, ғәйәт ҙур өҫтөнлектәренең күрһәткесе ул. Бөйөк Ватан һуғышы — иң алдынғы совет хәрби фәненең ижадсыһы Сталиндең хәрби-стратегик һәм полководецлек гениһенең триумфы ул.

Данлыҡлы большевиктар партияһы беҙҙең государствобыҙҙың һәм уның армияһы көстәренең иң бөйөк сығанағы булып тора. Һуғыш көндәрендә ул совет кешеләре алдында фашист баҫҡынсыларына ҡаршы бөтә халыҡ көрәшен ойоштороусы һәм рухландырыусы булып сығыш яһаны. Уның ойоштороу эше совет граждандарының бөтә героик тырышлыҡтарын бер бөтөнгә берләштерҙе һәм дошманды тар-мар итеүҙең дөйөм маҡсатына йүнәлтте.

Беҙ шуның өсөн еңеүгә өлгәштек, сөнки беҙгә бөйөк юлбашсы һәм уҡытыусы иптәш Сталин етәкселек итте. Ватан улдары фронтта Сталин исеме менән һуғышҡа инделәр, беҙҙең халҡыбыҙҙың улдары һәм ҡыҙҙары тылда Сталин исеме менән хеҙмәт подвигтары яһанылар. Һуғыштың ауыр йылдарында Ҡыҙыл Армияның һәм совет халҡының Советтар Союзының аҡыллы һәм һыналған юлбашсыһы — бөйөк Сталиндең алға алып барыуы беҙҙең бәхетебеҙ ул.

* * *

Икенсе бөтә донъя һуғышын сисеп ебәргән империалистар, 7 миллион самаһы кешене юғалтҡан, территорияһында 1710 ҡала, 7 меңдән артыҡ ауыл таланған һәм яндырылған Советтар Союзы бик оҙаҡҡа сафтан сығыр, тип өмөт иткәйнеләр. Ләкин беҙҙең социалистик государствобыҙ ҡыҫҡа срокта һуғыш йылдарында алынған яраларҙы уңалтып ҡына ҡалманы, бәлки халыҡ хужалығын артабан күтәреүгә өлгәште, уның һуғышҡа тиклемге кимәлен уҙып китте.

Хәҙер, СССР һәм халыҡ демократияһы илдәре үҙҙәренең тырышлыҡтарын тыныс хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнә йүнәлткән ваҡытта, капиталь илдәрендә яңы бөтә донъя һуғышына ныҡлы әҙерлек бара. Империалистар үткән һуғыштың һабаҡтарын иҫкә алмағандар. Американың донъяға хакимлекка дәғүә итеүселәре үҙ ваҡытында Гитлер үткәргән авантюристик политиканы үткәрәләр.

Уолл-стрит хужаларының ҡомһоҙлоғоноң сиге юҡ. Һуғыш Америка промышленниктарына һәм банкирҙарына 53 миллиард долларға яҡын саф доход килтергәс, Улар яңы, тағы ла ҙурыраҡ доход алыуға ынтылалар. Шуға күрә улар хәрби бюджеттарҙы ҡабарталар, ныҡлап ҡоралланалар, агрессив хәрби блоктар ойошторалар, донъяның бөтә өлөштәрендә хәрби базалар булдыралар. Уларҙы башында СССР торған тыныслыҡ лагерена ҡаты нәфрәт хәрәкәт иттерә.

Америка агрессорҙары Кореяға ҡаршы юлбаҫарлыҡ һуғышы алып баралар, улар Тайванды баҫып алдылар, Ҡытай Халыҡ Республикаһына баҫып инеү менән янайҙар. Көнбайышта ныҡлы рәүештә һуғышҡа әҙерлек бара. Көнбайыш Германияны ремилитаризациялау, Японияны ремилитаризациялау, Германияның реваншистик армияһын төҙөү, Америка ғәскәрҙәренең Францияны, фактик алғанда, оккупациялауы ошо маҡсатҡа йүнәлтелгән.

Һуғыш, бөтә донъя реакцияһы лагерена ҡаршы Советтар Союзы етәкселегендәге тыныслыҡ, демократия, социализм лагеры тора. СССР-ҙа коммунизм төҙөүҙең уңыштары халыҡ демократияһы илдәрендә социалистик төҙөлөштөң ҡаҙаныштары бөтә ер шарының ябай кешеләрен тыныслыҡ өсөн, Англия-Америка һуғыш тоҡандырыусыларына ҡаршы героик көрәшкә рухландыра. Тыныслыҡ өсөн көрәш фронты киңдән-киң киңәйә, капиталистик илдәрҙә коммунистар һәм эшселәр партияларының йоғонтоһо үҫә. Иптәш Сталиндең: әгәр ҙә халыҡтар тыныслыҡты һаҡлап ҡалыу эшен үҙ ҡулдарына алһалар һәм уны аҙағына тиклем яҡлаһалар, тыныслыҡ һаҡлап ҡалыныр һәм ныҡытылыр, тигән һүҙҙәре массаларҙың аңына барған һайын тәрәнерәк инә бара.

Совет кешеләренең тыныс хеҙмәтен Совет Армияһының һәм Хәрби-Диңгеҙ Флотының үҙҙәренең боевой һәм политик әҙерлектәрен өҙлөкһөҙ камиллаштыра барыусы батыр воиндары һаҡлайҙар. Партия, хөкүмәтебеҙ, иптәш Сталин уға коммунизм төҙөүселәрҙең ижади хеҙмәтен һаҡлауҙы ышанып тапшырғандары өсөн уларҙың һәр береһе ҙур ғорурлыҡ тойғоһо менән тулы.

Беҙҙең халҡыбыҙ үҙенең героик улдары — Совет Армияһының һәм Хәрби-Диңгеҙ Флотының воиндары социалистик Ватан алдындағы изге бурыстарын намыҫ менән үтәйәсәктәренә ышана ала.

Генерал-майор В. Московский.

СССР Сит Ил Эштәре Министерствоһында

Матбуғатта хәбәр ителгәнсә, Совет Хөкүмәте ошо йылдың 4 июнендә АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренә нота ебәргәйне, был нотала Совет Хөкүмәте, Сит Ил Эштәре Министрҙары Урынбаҫарҙарының Париждәге кәңәшмәһе көн тәртибенә Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары хаҡындағы пунктты индереү тураһындағы мәсьәләне ыңғай хәл итеү менән үк үҙенең вәкилен Сит Ил Эштәре Министрҙарының Вашингтонда үткәреләсәк кәңәшмәһенә һис кисекмәҫтән ебәрергә әҙер торасаҡ, тип күрһәтелгәйне.

15 июнлә АҠШ-тың, Великобританияның һәм Францияның вәкилдәре Урынбаҫарҙарҙың Париждәге әҙерлек кәңәшмәһендә СССР Сит Ил Эштәре Министры Урынбаҫары А. А. Громыкоға бер үк йөкмәткеле яуап ноталары тапшырҙылар, был ноталарҙа, Совет Хөкүмәтенең 4 майҙағы нотаһын тапшырғандан һуң Сит Ил Эштәре Министрҙары Урынбаҫарҙарының Париждәге кәңәшмәһенең ултырыштары Сит Ил Эштәре Министрҙар Советының килешеүҙә ниндәй ҙә булһа прогреска өлгәшеү мөмкин түгел икәнлеген күрһәттеләр, сөнки совет вәкиле көн тәртибенә Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһында мәсьәлә индереүҙе талап итә, тип әйтелә. АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең ошо мәсьәләне тикшерергә теләмәүҙәре ноталарҙа шундай менән нигеҙләнә: Атлантик пакт тураһындағы мәсьәләне тикшереү, СССР унда ҡатнашыусы булып тормағанлыҡтан, Сит Ил Эштәре Министрҙар Советының компетенцияһына инмәй, тиҙәр. Ноталарҙа шулай уҡ, «дүрт державаның Сит Ил Эштәре Министрҙары, көн тәртибе буйынса Урынбаҫарҙарҙың шул уҡ килешеүгә өлгәшергә артабан тырышыуҙарынан башҡа, Парижда Урынбаҫарҙар тарафынан өлгәшелгән мәсьәләләрҙең киң ҡруғы буйынса килешеү нигеҙендә осрашһындар», тигән тәҡдим бар ине.

Күрһәтелгән ноталарҙың күсермәләре шул уҡ көндә АҠШ, Великобритания һәм Францияның Мәскәүҙәге Посольстволары тарафынан СССР Сит Ил Эштәре Министерствоһына шул уҡ көндә ебәрелделәр.

20 июнда дүрт держава Сит Ил Эштәре Министрҙары Урынбаҫарҙарының Париждәге әҙерлек кәңәшмәһендә СССР вәкиле А. А. Громыко күрһәтелгән кәңәшмәлә АҠШ вәкиленә Совет Хөкүмәтенең яуап нотаһын тапшырҙы.

Совет Хөкүмәте нотаһының текстында былай тип әйтелә:

«ССР Союзы Хөкүмәте, дүрт державаның хәҙерге ваҡытта Парижда барған һөйләшеүҙәре тураһындағы мәсьәлә буйынса Америка Ҡушма Штаттары Хөкүмәтенең ошо йылдың 15 июнендәге нотаһын ҡарап, түбәндәгеләрҙе белдереүҙе кәрәк, тип иҫәпләй.

Совет Хөкүмәте ошо йылдың 4 июнендәге үҙ нотаһында, Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базаларына ҡарата булған пунктты көн тәртибенә индереү тураһындағы мәсьәләне Сит Ил Эштәре Министрҙары Урынбаҫарҙарының Париждәге кәңәшмәһе ыңғай мәғәнәлә хәл иткәс тә, Сит Ил Эштәре Министрҙар Советының Вашингтондағы кәңәшмәһенә үҙ вәкилен кисекмәҫтән ебәрергә әҙер тора, тип белдергәйне.

Совет Хөкүмәте, беренсенән, Америка хәрби базаларының һәм Атлантик пакттың Европалағы көсөргәнешле хәлдең төп сәбәбе булып тороуынан һәм, икенсенән, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре көүек үк АҠШ хөкүмәтенең дә Европалағы көсөргәнешле хәлде йомшартыу кәрәклеген таныуынан сығып, был мәсьәләне (килешелмәгән пункт сифатында) Сит Ил Эштәре Министрҙар Советының көн тәртибенә индерергә кәрәкле, тип иҫәпләй.

Дүрт держава Сит Ил Эштәре Министрҙары Урынбаҫарҙарының Париждәге әҙерлек кәңәшмәһенең ултырыштарында АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәренең Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһында үҙе тәҡдим иткән мәсьәләне тикшереүҙән Совет Хөкүмәтенең баш тартыуын Сит Ил Эштәре Министрҙар Советын саҡырыу шартты итеп бөтөнләйгә нигеҙһеҙ ҡуйыуҙарын күрһәттеләр. Ләкин, өс держава вәкилдәре Министрҙар кәңәшмәһендә тикшерергә тәҡдим иткән бөтә мәсьәләләр ҙә совет вәкиленең тулы ризалығында көн тәртибенә индерелгән бер ваҡытта, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индереү хаҡында совет вәкиленең тәҡдимен ҡабул итеүҙән баш тартып, өс держава шуның менән Советтар Союзын тиң хоҡуҡлы булмаған хәлгә ҡуя. Өс держава вәкилдәре ҡуйырға теләгән тиң хоҡуҡлы булмаған хәл менән Совет Хөкүмәтенең килешә алмауы тулыһынса аңлайышлы.

Атлантик пакт тураһындағы мәсьәләне Сит Ил Эштәре Министрҙар Советында тикшереүгә ризалыҡ биреүҙән өс держава вәкиленең ҡурҡыуына Совет Хөкүмәте ғәжәпләнә. Билдәле булыуынса, Совет Хөкүмәте менән Ҡытай, Польша, Чехословакия, Венгрия, Румыния, Болгария, Финляндия, аҙаҡ килеп, Франция һәм Англия менән үҙ-ара ярҙам күрһәтеү пакттары бар. Совет Хөкүмәте, әгәр ҙә державалар теләйҙәр икән, был пакттарҙың теләһә ҡайһыһының Сит Ил Эштәре Министрҙары Советында тикшерелеүенә ҡаршы килмәй. Шуға күрә көнбайыштағы өс державаның бындай юлға баҫыуҙан баш тартыуҙары һәм Атлантик пакт һәм хәрби базалар тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә ҡуйырға ни өсөн теләмәүҙәре Совет Хөкүмәтенә аңлашылмай. Һүҙ бит ябай ҡыҙыҡһыныу хаҡында түгел, ә көсөргәнешле обстановканы йомшартыу һәм тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу эшен еңеләйтеү тураһында бара. Совет Хөкүмәте, Европалағы көсөргәнешле хәлде тыуҙырыусы бөтә сәбәптәрҙе асыҡтан-асыҡ тикшереүҙе үҙенең талап итеүен яңынан белдерә.

Совет Хөкүмәте Сит Ил Эштәре Министрҙар Советының көн тәртибе буйынса (яҡтарҙың тиң хоҡуҡлылығы нигеҙендә) килешеүгә өлгәшеү маҡсаттарында Сит Ил Эштәре Министрҙары Урынбаҫарҙарының Париждәге үҙ кәңәшмәләрен дауам иттереүҙәрен кәрәкле тип иҫәпләй, был ваҡытта Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне (килешелмәгән пункт сифатында) индереүҙе күҙҙә тоторға кәрәк, сөнки был мәсьәлә Европалағы көсөргәнешле хәлде бөтөрөү өсөн иң мөһим мәсьәлә булып тора.

19 июнь 1951 йыл».

Ошондай уҡ ноталар бер үк ваҡытта Великобритания һәм Францияның Париждәге кәңәшмәләге вәкилдәренә лә тапшырылды.

Совет Хөкүмәте ноталарының күсермәләре 20 июнда СССР Сит Ил Эштәре Министерствоһы тарафынан АҠШ, Великобритания һәм Францияның Мәскәүҙәге Посольстволарына ебәрелде.

Бер үк үлем ул әткә

Беләм, беләм, Паж Ден Ай,
Булмаһам да илеңдә,
Мин күрҙем, ул яуыҙдарҙы
Туған илем сигендә.
Мин күрҙем Ржев ҡалдарын,
Күҙ йәшен моң өсәнен.
Күрҙем үлемде еңеүен,
Тантанаһын йәшәүҙең.

Джи-айҙың ҡулдарында
Шул уҡ фашист балтаһы.
Һәм Трумэн маңғайында
Шул уҡ Гитлер тамғаһы.
Был пожар ялҡындарын
Халыҡтар таратмаҫ сиккә.
Тонсорор доллар ҡоло ла
Бер үк үлем ул әткә.

Әкрам Вәли.

Коммунизм төҙөүселәр

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғас илебеҙҙең халыҡ хужалығы яңы ғына ... ла баҫтырыла башлағайны әле. Ә... Латиповтың Совет Армияһы сафынан ҡайтыуы ла тап ошо тыныс хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү осорона тура килде.

Был 1947 йылдың яҙы ине.

Ҡулына ҡорал тотоп немец-фашист баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышҡан, һуғыш яландарында батырлыҡтар күрһәткән өсөн бер нисә тапҡыр орден һәм миҙалдар менән наградланған, Будапешт менән Кенигсберг ҡалаларына тиклем еткән был воинда тыныс төҙөлөш шарттарында ла фронттағы көүек, бөтә совет халҡы менән бергә хужалыҡта актив ҡатнашыу теләге яна ине. Күп тә үтмәй ул Өфө телефон аппараттары заводына токарь булып эшкә инде. Тыныс хеҙмәттең тәүге көндәрендә үк ул производствола юғары хеҙмәт күрһәткестәре бирә башланы. Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашсыһы ...нәф Латиповтың айлыҡ план үтәүе 150 процент тәшкил итте, Ләкин ул быны менән генә туҡталып ҡалманы.

— Тыуған илебеҙҙең экономикаһын һәм бөйөк һуғыштарҙа яулап алынған еңеүҙе артабан нығытыу өсөн мин тыныс хужалыҡ фронтында ла үҙ көсөмдө аямай эшләргә тейешмен, — тине.

Токарҙың һүҙе эштән айырылманы. Ул Ленин — Сталин училищеларҙың ... техминимум курсында отличнога уҡый, стахановсылар мәктәбендә иң актив ҡатнашыусыларҙың береһе булып ...

Хәҙер ул бригада менән етәкселек итә. Уның бригадаһы производство программаһын систематик 170—200 процентҡа үтәй. Бригада члендары Морозов, Ғәйнетдинов, Ишмаков иптәштәр ҙә алдынғы стахановсылар булып һаналалар.

Бындай алдынғылар һәм стахановсылар хәҙер цехта һәм бригадала ғына түгел, завод күләмендә лә күп. Уларҙың һаны көндән-көн үҫә бара. Расточник Морозов, өлкән мастерҙар Ромин һәм Фролов иптәштәр — бөтәһе лә Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары.

— Беҙ, — тиҙәр улар, — бынан ун йыл элек башланған һуғышты тағы ла булдырмаҫ. Тыуған илебеҙҙең экономикаһын тағы ла нығытыу өсөн үҙ производствобыҙҙа артабан да яҡшыраҡ эшләйәсәкбеҙ.

Һәм был дөрөҫ тә. Сөнки ни тиклем яҡшы эшләһәк, илебеҙ шул тиклем ныҡ үҫәтле һәм тормошобоҙ шул тиклем бай һәм күңелле буласаҡ.

Ә. Сайфетдинов.

Өфө телефон аппараттары заводының техник контроль бүлеге өлкән контролеры.

Ярты йыллыҡ план үтәлде

Ишембай ҡалаһы «Тәйрүк» промартеленең алебастр заводы эшселәре араһында 1951 йыл планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш киң йәйелдерелгән. Ярыш ҙур уңыштар килтерҙе. Ярты йыллыҡ план 5 ай эсендә 10 процентҡа үтәлде. 21 кубометр механизациялаштан утын менән 50 тонна алебастр яндырылды.

Заводтың иң алдынғы стахановсыларынан яндырыусы Хәмидуллин, тирмәнсе Хәйруллин, таш ватҡаусылар Ғәзизова, Хисмәтуллина, бутаусы Хәмидуллина, таш ҡаҙыусыларҙан Ғүмәров, Фәйзуллина иптәштәр көнлөк нормаларын 150 — 170 процентҡа үтәйҙәр.

Хәҙер завод коллективы йыллыҡ планды срогынан алда үтәү һәм пландан тыш 1000 тонна алебастр етештереү өсөн көрәшә.

Л. Фәйзуллин.

«Тәйрүк» промартеленең партбюро секретары.

ИНЖЕНЕР КОВАЛЕВ МЕТОДЫН КИҢ ТАРАТАБЫҘ

Инженер иптәш Ковалев илебеҙҙең промышленносында һәм ауыл хужалығында хеҙмәт етештереүсәнлеген тағы ла юғары күтәреүгә яңы вклад индерҙе. Ул, алдынғы стахановсыларҙың иң яҡшы эш алымдарын фәнни яҡтан өйрәнеп һәм дөйөмләштереп, уны бөтә эшселәргә лә таратырға тәҡдим итте. Ҡиммәтле был башланғыс хәҙер промышленностың бөтә тармаҡтарында ла ҡулланыла.

Иптәш Ковалев методын беҙҙең трактор конторһы коллективы ла хуплап ҡаршыланы. Уны ул производствоға индереү өсөн саралар күрҙе. Контораның иң яҡшы трактористары Кочкуров, Мальцев һәм Юдаков иптәштәрҙең алыҫ юлға йөктө тиҙ йөрөтөү буйынса эш алымдарына күҙәтеүҙәр үҙғарылды. Бөтә был эштәрҙе башҡарыуҙа инженер-техник работниктар төп роль уйнанылар. Билдәле, күҙәтеүҙәр алып барыу өсөн алынған өс тракторист та бер генә төрлө эш алымы менән эшләмәйҙәр. Уларҙың һәр береһендә үҙҙәренә генә хас булған айырыуса яҡшы эш алымдары бар. Беҙ был материалдарҙы техник кәңәшмәлә трактористарҙың актив ҡатнашлығында тикшергәндән һуң, иң яҡшы алымдарҙы бөтә трактористар араһына таратыуға күстек.

Быға тиклем алыҫ юлға йөрөүсе «С—80» маркалы тракторҙар төрлө тиҙлектә йөрәтеләләр ине. Хәҙер беҙ уртаса тиҙлекте сәғәтенә 7 километр итеп алдыҡ. Сөнки ҙур тиҙлектә йөрөү ҙә бик зыянлы. Ул тракторҙың техник яҡтан торошон насарайта һәм ремонт-ара эшләү срогын бик ҡупка кәмета. Бигерәк тә ауыр йөктәр йөрәткәндә, тракторҙың тиҙлектәрен дөрөҫ регулировать итеүгә айырыуса иғтибар итергә кәрәк. Йөктө урынынан ҡапыл тартып алып күтәргә һис тә ярамай. Рейстан кире ҡайтҡанда, иптәш Кочкуров тәжрибәһе буйынса йөк менән ҡайтыу бик файҙалы. Әйтергә кәрәк, быға тиклем беҙ был эшкә тейешле иғтибар бирмәгәнбеҙ. Хәҙер контораның эксплуатациялау бүлеге работниктарына трактористарҙы рейстан кире ҡайтҡанда ла тейешле ауырлыҡта йөк менән тәьмин итеү өсөн ҡаты күрһәтмә бирелде. Тейәү һәм бушатыу операцияһында тракторҙы, норма күрһәтелгәнгә ҡарағанда, бик аҙ ваҡыт тотоусы иптәш Кочкуровтың эш алымын башҡаларға таратабыҙ. Иптәш Кочкуров тракторҙың тағылмаһын йөк тейәү һәм бушатыу операцияһында дөрөҫ урынлаштыра, бушатыуҙы тиҙләтеү өсөн тракторҙы ла файҙалана. Тракторға яғыулыҡ һалыу процесын да ул сменанан һуң башҡара, ә икенсе көндө, смена башланғас, был эшкә ваҡытты әрәм итмәйенсә, рейсҡа китә.

Яғыулыҡҡа экономия яһау буйынса тракторист иптәш Мальцевтың тәжрибәһе яҡшыраҡ. Ул 30 минуттан күберәк торған урындарҙа моторҙы эшләтеүҙән бөтөнләй туҡтата, аҙ ваҡытҡа туҡтағанда, моторҙы аҙ көстә эшләтә. Тракторҙы ҡарап йөрөү һәм дөрөҫ эксплуатациялау буйынса иптәш Мальцевтың тәжрибәһен айырыуса күрһәтеп үтергә кәрәк. Ул үҙенең тракторының ремонт-ара эшләү срогын 5674 машина-сәғәткә еткерҙе һәм 55 мең һумлыҡ ағымдағы ике һәм бер капиталь ремонтҡа экономия яһаны.

Юғарыла күрһәткән һәм башҡа бик күп алымдарҙы бөтә трактористарға ла таратыу өсөн стахановсылар мәктәбе астыҡ. Унда стахановсы трактористар һәм контораның етәксе работниктары сығыш яһайҙар.

Тракторҙарҙы дөрөҫ эксплуатациялауҙың алдынғы тәжрибәләрен өйрәнеү менән бергә беҙ тракторҙарҙы ремонтлауҙы тиҙләтеүсе һәм ремонт сифатын күтәреүсе эш тәжрибәләрен дә таратабыҙ.

Тормоздың өҫтәге шпонкаһын алмаштырып ҡуйыуҙы ғына алайыҡ. Был эште башҡарыу ваҡытын иптәш Басыров бригадаһы 4 тапҡырға кәметте. Иптәш Терпвтең бригадаһы металл серғаны һәм йомшаҡ сцепление серғаһын алыштырып ҡуйыу операцияһын 2,8 тапҡырға ҡыҫҡартты. Бөтә был алымдар стахановсылар мәктәбендә бөтә слесарҙар менән өйрәнелде.

Токарлыҡ һәм фрезерлыҡ эштәре буйынса ла Скворцова, Кострюкова һәм Наумова иптәштәрҙең эш алымдарына хронометраж күҙәтеүҙәр үҙғарылды. Мастер иптәш Чуриков етәкселек иткән токарь цехында токарҙарҙан һәм фрезеровщиктарҙан 20 кеше стахановсылар мәктәбен тамамланы. Хәҙер был цехта үҙенең нормаһын үтәмәгән бер генә лә кеше юҡ.

Алдынғы стахановсыларҙың эш алымдарын өйрәнеү, уны дөйөмләштереү һәм производствоға индереү эштәрен башҡарыуҙы еңел генә эш тип ҡарарға ярамай. Ул бик ҡатмарлы һәм бик күп көс талап итә. Ләкин был көстө йәлләргә ярамай. Һуңынан хеҙмәттә ул бик ҙур файҙа килтерә.

А. Хитров.

«Ишембайнефть» тресының тракторҙар контораһы баш инженеры.

Бойҙай сәсеүлектәрен тәрбиәләү саралары

Яҙғы бойҙайҙан юғары һәм тотороҡло урожай алыу өсөн сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү бик мөһим сара булып тора.

Быйыл бойҙай сәсеүлектәрен тәрбиәләүгә айырыуса ҙур иғтибар бирелә. Был уңдырышлы культура бойҙай сәсеүлектәре майҙанын арттырыу менән бәйле. Туфраҡтың дымлылығын һаҡлау, сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәрҙән таҙартыу, өҫтәмә ашлау кеүек саралар ваҡытында үткәрелергә тейеш.

Майҙан төҙөлөшөнә, тупраҡтың һәм һауа шарттарына ҡарап бойҙай сәсеүлектәрен тәрбиәләү саралары төрлөсә булырға мөмкин. Башҡортостандың көньяҡ райондарында яҙғы бойҙай сәсеүлектәренә ҡоролоҡ ҙур зыян килтерә. Был шарттарҙа дымды һаҡлау буйынса саралар айырыуса әһәмиәткә эйә.

Бойҙай өсөн беренсе үҫеү осоронда туфраҡтағы дым айырыуса кәрәк.

Утау. Бойҙай тәрбиәләү буйынса иң кәрәкле сараларҙың береһе — ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш. Ҡый үләндәре бойҙайҙан дымды һәм туҡлыҡлы матдәләрҙе тартып ала, уның үҫешен тотҡарлай. Сәсеүлектәрҙе ваҡытында утау урожайҙы байтаҡҡа арттыра. Бойҙай сәсеүлектәрен ҡул менән һәм машиналар менән утайҙар.

Сәсеүлектең ҡыйланыу проценты 20,3; 8,3; 2,9; 0,0

Бертек урожайы (центнер иҫәбе менән) 10,3; 16,3; 21,7; 23,4.

Был мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, ҡыйланыу проценты 20—23 самаһында булған сәсеүлектән бермә-бер кәм урожай алыныуы беленде.

Сәсеүлектәрҙе тырматыу. Ерҙе тырматыу ярҙамында туфраҡ өҫтөндәге ҡабыҡ емерелә, ҡый үләндәре юҡ ителә һәм дым һаҡлана.

Был иң яҡшы агротехник сара булып иҫәпләнә.

Сәсеүлектәрҙе өҫтәмә ашлау. Өҫтәмә ашлауҙың файҙаһы бик ҙур. Ашламаларҙы ваҡытында индереү бойҙайҙың үҫешен яҡшырта, урожайҙы арттыра. Минераль һәм органик ашламалар ҡулланыла.

Өҫтәмә ашлауҙан юғары һөҙөмтәләр алыу өсөн ашламаларҙы дөрөҫ ҡулланыу кәрәк.

Ҡоротҡостар менән көрәшеү. Ҡоротҡостар бойҙай сәсеүлектәренә ҙур зыян килтерә. Уларға ҡаршы ваҡытында көрәшеү урожайҙы һаҡлап ҡалырға ярҙам итә.

Быйыл йомран, шулай уҡ башҡа ҡоротҡостар менән көрәшкә ҙур иғтибар бирелә. Йомрандарҙы ағыулы аҙыҡ менән юҡ итәләр.

...ҡаңдарҙы мышьяк ағыуҙарынан алдағыстар (уларҙы бешкән икмәк, ашлыҡ бөртөктәре менән араластырып) әҙерләп, ояларына һалыу аша үлтерергә мөмкин.

В. Ғирфанов,

баҫыусылыҡ тәжрибә станцияһының өлкән ғилми сотрудниге.

Ал ... мында (10 сантиметр тәрәнлегендә) етерлек дымлылыҡ һәм еңел үҙләштерелә алырлыҡ аҙыҡ элементтәре булған саҡта ғына эшмәкәрлек итә алалар. Был талаптарҙы үтәүҙә сәсеүлектәрҙе өҫтәмә аҙыҡландырыу бик ҙур роль уйнай. Мәҫәлән, Мәсетле районы Карл Маркс исемендәге

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Уҡыусыларҙың ялы ойошторолмаған

Краснокама район мәғариф бүлегендә балаларҙың йәйге ялын ойоштороу тураһында мәл башынан уҡ һөйләй башланылар.

Тәрән тикшереү, директорҙарҙың ҡарауы тураһында хәбәр итеүҙәре ... Район мәғариф бүлеге менән ...

Ләкин балалар тураһында хәстәрлек ... ойоштороуҙа ... Район мәғариф бүлеге директорҙары ...

Березовка, Бабановка һәм башҡа ауыл мәктәптәрендә пионер дружиналары ойошторолорға тейешле ине, ләкин улар әле һаман эшләмәйҙәр.

Мәктәптәрҙә Тыуған крайҙы өйрәнеү буйынса төрлө походтар, экскурсиялар ойоштороу тураһында бик йыш ... һөйләнә ... ВЛКСМ-дың район комитете район пионер лагерен ойоштороу тураһында ...

Шулай итеп, районда уҡыусылар ял итеүе тураһында хәстәрлек күрелмәй.

Ф. Әхмәҙиев.

Үткән йылдағы хаталарҙы ҡабатлайҙар

Ғафури районында былтыр уңышлы ... сабынлыҡтарҙың күп булыуҙары общественный малсылыҡ өсөн аҙыҡ әҙерләү планын байтаҡ арттырып үтәүгә мөмкинлектәр тыуҙыра.

Бесән сабыуҙың уңышын уға әлгәде әҙерлек хәл итә. Ләкин райондың күпселек колхоздары уға әҙерлекһеҙ киләләр. Чапаев исемендәге һәм «Йондоҙ» колхоздарында бесән сабыу машиналары ремонтланмаған.

Общественный малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыуҙа МТС-тарҙың роле бик ҙур. Райондағы ике МТС договор йөкләмәләре нигеҙендә колхоздарға 2 мең гектар бесән сабып һәм 6 мең тонна силос һалып бирергә тейештәр. Ләкин МТС-тар ҙа был эшкә әҙерлекһеҙ киләләр. Янғыҙ ҡайын МТС-ы силос ҡырҡҡыстарҙы Стәрлетамаҡ ҡалаһынан һаман килтермәгән әле. МТС-ҡа 4 трактор бесән сапҡысы алыу өсөн наряд бирелгән, ләкин улар һатып алынмаған. Шулай итеп, мал аҙыҡтары әҙерләүҙе ойоштороу өсөн МТС-та бер генә машина ла юҡ.

С. Усманов.

Йәш таланттар

Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының рус драма театры бинаһында һөнәрселек училищелары һәм ФЗО мәктәптәре уҡыусыларының художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәктәренең республика смотры булып үтте. ...

Смотрҙы Өфө, Черниковск, Стәрлетамаҡ, Ишембай ҡалаларындағы ФЗО мәктәптәренең һәм һөнәрселек училищеларының 500-ҙән ашыу йәш уҡыусыһы ҡатнашты. ...

... Шуның өсөн дә ... Колхозсылар ... Сталин тураһында йыр ... композитор ... Ҡаҙандағы ...

Ишембай ҡалаһының 2-се номерлы һөнәрселек училищеһының хоры ... байтаҡ ... Училищеның бейеү коллективының ...

... неүҙәре түңәрәге смотрҙа өҫтөнлек алды. Коллектив башҡарышындағы башҡорт егеттәре, ҡыҙыл флотсылар бейеүҙәре тамашасылар тарафынан айырыуса йылы ҡаршы алынды. Был түңәрәк менән ошо уҡ училищеның уҡыусыһы Паил Тибеев етәкселек итә. Уның тарафынан һалынған ҡуйма бейеүҙәрҙең эстәлекле булыуы техник яҡтан яҡшы, матур ...

Концертта 15-се номерлы һөнәрселек училищеһының 80 кешенән торған хоры сығыш яһаны. ...

Черниковск ҡалаһының 3-сө номерлы һөнәрселек училищеһының ...

Һөнәрселек училищеларының, ФЗО мәктәптәренең художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәренә уҙғарылған быйылғы смотр республикабыҙҙа үҙ эшмәкәрлек искусствоһының ҡыйыу аҙымдар менән алға китеүен күрһәтеүҙә ярҙам итте.

Смотрҙың аҙаҡҡы көнендә уҙғарылған йомғаҡлау концерты байрам обстановкаһында ҙур ойошҡанлыҡ менән үтте.

Р. Хәсәнов.

Перспектив мәсьәләләрҙе хәл итәбеҙ

Колхозыбыҙ эреләтелгәс, беҙгә перспектив мәсьәләләрҙе ҡыйыуыраҡ хәл итә башлауға ҙур мөмкинлектәр асылды. Яҙғы баҫыу эштәре, үҙған йылға ҡарағанда, байтаҡ ҡыҫҡа срокта үткәрелде. Бөтә яҙғы эштәр 13 эш көнөндә тамамланды. Игендәрҙең сығышы һәйбәт, беҙ хәҙер сәсеүлектәрҙе тәрбиәләйбеҙ.

Хөкүмәт беҙгә тракторҙар менән ярҙам итте. Тәжрибәле механизатор иптәш Бүләкбаев етәкселек иткән трактор бригадаһы колхоз менән төҙөгән договорҙа күрһәтелгән эштәрҙе арттырып үтәне. Трактор бригадаһының эш сифаты быйыл бик ныҡ яҡшырҙы. Сәнки тракторҙар быйыл ҙур ер массивтарында эшләнеләр, эсбе резервтәрҙе киңерәк файҙаландылар.

Баҫыу эштәрен уңышлы алып барыуҙы бригадаларҙың юғары ойошҡанлыҡ менән эшләүе хәл итте. Иптәш Ғәйсин етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы трактор бригадаһы менән берлектә эшләне, юғары урожай өсөн көрәш берҙәм алып барылды.

Хәҙер общественный малсылыҡты үҫтереүҙә лә серьез саралар күрелә. Колхоз йылҡы, һарыҡ-кәзә малдары үрсетеүҙең 1951 йыл пландарын срогынан алда үтәне.

Общественный малсылыҡтың продуктивлеген күтәреү уны йылы, стандарт торлаҡтар менән тәьмин итеүгә бәйләнгән. Мал торлаҡтары төҙөр өсөн кәрәк буласаҡ ағасты беҙ яҙҙан уҡ әҙерләп ҡуйҙыҡ. Быйыл һарыҡтар, аттар өсөн яңы торлаҡтар төҙөлә.

Ун кешенән төҙөү бригадаһы ойошторолдо. Уға колхоздың тәжрибәле балта оҫтаһы Ғиниәтуллин етәкселек итә.

Колхозда яңы кирбес заводы төҙөү эше тамамланды. Унда быйылғы сезонда 100 мең кирбес әҙерләнәсәк.

Колхоздың бер бригадаһында гидроэлектростанция бар. Киләсәктә электр энергияһы бөтә бригадаларҙа ла буласаҡ.

Й. Азнабаев,

Әбйәлил районы «Ҡыҙыл маяҡ» колхозы председателе.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„ОЙОТОЛҒАН КУЛЬТУРА УЧРЕЖДЕНИЕЛӘРЕ"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 92-се номерендә Дүртөйлө районындағы ҡайһы бер колхоз клубтары үҙ линияһы буйынса файҙаланылмауы һәм иҫкергән клубтарға ремонт үткәрелмәүе тураһында хәбәр баҫылғайны. ВКП(б)-ның Дүртөйлө район комитетенең редакцияға хәбәр итеүенсә, был хәбәр тикшерелеп, унда күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса практик саралар билдәләнгән.

Киров исемендәге колхоздың клубы ашлыҡтан бушатылып үҙ линияһы буйынса файҙаланыла башлаған. Куйбышев исемендәге колхоздың клубына капиталь ремонт үткәрелгән. Хәҙер ул план буйынса эш алып бара. Шулай уҡ һуңғы көндәрҙә район культура йорто эргәһендә агитбригада һәм ике художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәге эшләй. Был художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәре хәҙер район үҙәген һәм күп кенә колхозсыларҙы спектакль һәм концерт номерҙары менән хеҙмәтләндереп килә.

Культура-ағартыу учреждениеләре эшенә даими етәкселек итергә

З. НАФИКОВ,
ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитете секретаре.

Совет халҡының политик һәм культура кимәлен күтәреү коммунистик общество төҙөү өсөн көрәштә ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте был эшкә ҙур иғтибар бирәләр. Бөтә илдә культура төҙөлөшө бик киң рәүештә алып барыла. Театрҙарҙың, культура дворецтәренең һәм йорттарының, киноустановкаларҙың, библиотекаларҙың, клубтарҙың һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙең һаны йылдан-йыл арта бара. Бик күп һанда лекциялар һәм докладтар үткәрелә, үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәктәренең эше киң йәйелдерелә. Культура-ағартыу учреждениеләре эшенең идея-политик кимәле күтәрелә һәм йөкмәткеләре яҡшыра.

Өфө ҡалаһында культура-ағартыу учреждениеләренең киң селтәре бар. Ҡалала 4 театр, государство филармонияһы, 4 музей, 5 кинотеатр, тиҫтәләрсә даими киноустановкалар, 150-нән артыҡ библиотека, 200-гә яҡын клуб һәм ҡыҙыл мөйөштәр эшләй.

Һуңғы йылдарҙа был учреждениеләрҙең эше һиҙелерлек яҡшырҙы.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең искусство мәсьәләләре буйынса ҡарарҙарын үтәй барып, ҡаланың театрҙары үҙҙәренең эштәрен байтаҡ яҡшыртыуға өлгәштеләр. Драма театрҙарының һәм шулай уҡ опера һәм балет театрының репертуары яңы спектаклдәр менән байыҡтырылды. Улар күп йылдар эсендә беренсе тапҡыр яңы спектаклдәр биреү планын үтәнеләр. Театрҙарҙың коллективтары спектаклдәрҙең сифаты өсөн дә ныҡышмалыраҡ көрәшә башланылар.

Ләкин ҡала театрҙарының эшендә етешһеҙлектәр ҙә күп. Башҡорт государство опера һәм балет театры репертуарында ни бары ике генә башҡорт операһы — «Аҡбуҙат» һәм «Ҡарлуғас» опералары ғына бар. Һуңғы йылдарҙа композитор Мортазин тарафынан тағы ла бер опера — «Азат» операһы яҙылғайны. Ләкин ул, бер нисә тапҡыр ҡуйылғандан һуң, түбән сифатлы булғаны өсөн, сәхнәнән төшөрөлдө. Театрҙың репертуарында башҡорт балеттәре лә шулай уҡ икәү генә, улар: «Сыңғырау торна» һәм «Тау әкиәте». Был хәлде бары тик бер нәмә менән генә аңлатып була — республика Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһе, Башҡортостан совет яҙыусылары һәм композиторҙары Союздары, шулай уҡ театрҙың етәкселеге башҡортса яңы оригиналь опера һәм балет ижад итеүгә ҡарата тейешле саралар күрмәйҙәр.

Ҡала театрҙарында айырым спектаклдәрҙең сифаты менән дә эш яҡшынан түгел. Күп кенә спектаклдәр сәхнәлә ҡуйылған ваҡытта артабан яҡшыртылмайҙар ғына түгел, ә киреһенсә, уларҙың премьералары менән сағыштырғанда үҙҙәренең сифаттарын түбәнәйтәләр. Рус драма театрының «Батша улы Иван тураһында әкиәт» спектакле һәм рус, шулай уҡ башҡорт драма театрҙарының, опера һәм балет театрының башҡа күп кенә спектаклдәре тураһында ошоно әйтергә мөмкин.

Театрҙарҙың үҙ спектаклдәрен пропагандалау һәм тамашасыларҙы йәлеп итеү буйынса йомшаҡ эшләүҙәре уларҙың эшендә ҙур етешһеҙлек булып тора. Театр етәкселәре ҡаланың общественный ойошмалары менән әле һаман тығыҙ бәйләнеш тотмайҙар һәм уларҙы үҙҙәренең эштәренә ылыҡтырмайҙар.

Һуңғы йылдарҙа ҡаланың, бигерәк тә уның сиктәрендә йәшәүсе хеҙмәтсәндәргә кино күрһәтеү һиҙелерлек яҡшырҙы. 1950 йылдың аҙағында яңы «Урал», кинотеатры эксплуатацияға тапшырылды, паровоздар ремонтлау заводы, 2/13 номерлы таҡта ярыу заводы, психиатрик больница, крәҫтиәндәр йорто клубтарында һәм башҡа клубтарҙа даими киноустановкалар эшләй башланы. Күсмә киноларҙың һаны артты. 1950 йылда ҡалала кино ҡараусыларҙың һаны 1949 йыл менән сағыштырғанда, 350 мең кешегә үҫте, кинотеатрҙарҙа 3 миллион кеше булды.

Шулай ҙа ҡалала булған кинотеатрҙар селтәре хеҙмәтсәндәрҙең һаман үҫә барған культура талаптарын ҡәнәғәтләндерә алмайҙар әле. Шуға күрә кинотеатрҙар селтәрен артабан киңәйтеү, атап әйткәндә, Ленин урамында 2 залды кинотеатр төҙөүҙе тиҙерәк тамамлау, шулай уҡ Иҫке Өфөлә яңы кинотеатр төҙөү ҡаланың партия, совет органдарының һәм республика Министрҙар Советы эргәһендәге кинофикация управлениеһенең мөһим бурысы булып тора.

Һуңғы йылдарҙа Өфө ҡалаһында библиотекалар эше лә шулай уҡ яҡшырҙы. Библиотекаларҙа китаптар фонды йылдан-йыл үҫә һәм китап уҡыусыларҙың һаны арта бара. Бары тик республиканың үҙәк библиотекаһы һәм ҡала Советы исполкомының, культура-ағартыу эштәре бүлегенең 16 библиотекаһы буйынса ғына ла һуңғы ике йылда китаптар фонды 90 меңдән дә ашыуыраҡҡа артты, ә китап уҡыусыларҙың һаны 29 меңдән 33 меңгә тиклем үҫте. Ҡаланың библиотекалары, бигерәк тә 7-се номерлы балалар библиотекаһы, шулай уҡ 1, 2, 6-сы номерлы һәм башҡа ҡайһы бер библиотекалар уҡыусыларға китап биреүҙең төрлө формаларын ҡуллана башланылар; күсмә библиотекалар ойоштороу, китап уҡыусылар конференциялары, әҙәби кисәләр үткәреү практикаға инде.

Ләкин күп кенә предприятиеләрҙең һәм учреждениеләрҙең партия, профсоюз ойошмалары библиотекаларҙың эшенә ҡәнәғәтләнерлек етәкселек итмәйҙәр. Күп кенә библиотекаларҙың үҙҙәренең китап фондтарын тулыландыра бармауҙары, китап уҡыусылар менән тейешле эш ойоштормауҙары бары тик ошоноң менән генә аңлатыла.

Клубтарҙың һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙең эштәрендә ошолай уҡ серьез етешһеҙлектәргә юл ҡуйыла. Дөрөҫ, һуңғы йылдарҙа клубтарҙың һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙең һаны байтаҡ артты, ләкин улар хеҙмәтсәндәрҙең талаптарын ҡәнәғәтләндереүҙән алыҫ торалар әле.

Күп кенә клубтарҙың һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙең ошолай ҡәнәғәтләнерлек эшләмәүҙәре шуның менән аңлатыла: был предприятиеләрҙең хужалыҡ һәм партия ойошмалары етәкселәре үҙҙәренең коллектив члендәре араһында культура-ағартыу эшен ойоштороу тураһында тейешле хәстәрлек күрмәйҙәр, үҙҙәренең клубтарының һәм ҡыҙыл мөйөштәренең эшенә юнәлеш бирмәйҙәр, уларҙың эшенә етәкселек итмәйҙәр, ә клубтарҙа, шулай уҡ ҡыҙыл мөйөштәрҙә эшләүсе работниктар үҙҙәре эштә тейешле инициатива күрһәтмәйҙәр.

Культура-ағартыу учреждениеләре эшенең күп төрлө формалары һәм методтары араһында үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәктәренең эше мөһим әһәмиәткә эйә булып тора. Һуңғы йылдарҙа ҡаланың партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары үҙ эшмәкәрлек искусствоһын үҫтереүгә иғтибарҙы күберәк бүлә башланылар. Һөҙөмтәлә үҙ эшмәкәрлек художество коллективтарының һаны байтаҡҡа артты. Хәҙерге ваҡытта ҡалала 95 коллектив бар, уларҙа бөтәһе 3,5 меңгә яҡын кеше ҡатнаша.

Күптән түгел генә үткәрелгән смотр ҡаланың үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәктәренең һан яғынан үҫеүе менән бергә, үҙ эштәренең идея һәм художество кимәлдәрен күтәрә барғанлыҡтарын күрһәтте. Кижемамыҡ комбинаты, педагогия институты, мәктәпкәсә педучилище, уҡытыусылар йорто һәм башҡа күп кенә предприятие һәм учреждениеләрҙең художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәре айырыуса яҡшы һөҙөмтәләр бирҙеләр. Шул уҡ ваҡытта смотр күп кенә партия, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәктәре эшенә баһа биреп еткермәүҙәрен һәм хеҙмәтсәндәр араһында культура-ағартыу эштәрен алып барыуға ҡәнәғәтләнерлек етәкселек итмәүҙәрен күрһәтте. Ҡалалағы ошондай ҙур предприятиеләрҙең, мәҫәлән, телефон аппараттары, тау оборудованиеләре, химия промышленносе, витамин, судноляр ремонтлау, фанера, 2/13 номерлы таҡта ярыу заводтарының, библиотека техникумының районда, ҡалала һәм республика күләмендә үткәрелгән смотрҙарҙа яҡшы әҙерлек менән ҡатнаша алмауҙарын бары тик ошоноң менән генә аңлатырға мөмкин.

Партия, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының бурысы — эштең ошо участкаһын күтәреүҙән һәм уны хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙә мөһим средстволарҙың береһе итеп ҡулланыуға өлгәшеүҙән тора.

Хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙә лекцион эштең ҙур әһәмиәткә эйә булып тороуы һәр кем өсөн билдәле. Ҡалала ВКП(б)-ның ҡала комитете лекторҙар группаһынан башҡа лекцион эште политик һәм ғилми белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының бүлексәһе, ҡала Советы исполкомының лекцион бюроһы, һәр төрлө ғилми обществолар алып баралар. Ошо ойошмалар исеменән сығыш яһаусы лекторҙарҙың дөйөм һаны 800 кешенән дә артып китә. 1950 йылда һәм 1951 йылдың I кварталында улар 3,5 мең лекция уҡығандар.

Әйтеп үтергә кәрәк, ҡалала лекцион эштең күләме һәм кимәле бөгөнгө көндәң талаптарына яуап биреп етмәй әле. Лекциялар уҡыуға ғилми работниктар һәм юғары уҡыу йорттарының уҡытыусылары аҙ ылыҡтырылалар. Партия һәм совет ойошмаларының етәкселәре лекцион эштә бик аҙ ҡатнашалар. Ҡала Советы исполкомының лекцион бюроһы һәм шулай уҡ политик һәм фәнни белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының бүлеге бик аҙ кеше менән генә эш итәләр, нигеҙҙә штаттағы лекторҙарға ғына таяналар.

Лекцияларҙың йөкмәткеһе менән дә эш яҡшы түгел. Айырым лекциялар идеятеоретик яҡтан түбән булалар һәм тыңлаусыларҙы ҡәнәғәтләндермәйҙәр. ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттәре, шулай уҡ лекцион бюроларҙың етәкселәре лекцияларҙың сифатына ҡарата тейешле контролде тормошҡа ашырмайҙар. Күп кенә лекторҙар тикшерелмәгән һәм лекторҙар группаһында раҫланмаған тезистәр менән сығыш яһайҙар.

Хеҙмәтсәндәр араһында культура-ағартыу эшен алып барыуҙа булған ошондай ҙур кәмселектәрҙең йәшәүен бер нинди объектив сәбәптәр менән дә аҡлап булмай. Был мөһим эштең ошондай хәлдә булыуы өсөн ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттәре, ҡала һәм район Советтәре исполкомдары, шулай уҡ партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары ғәйеплеләр.

Хәҙер бурыс, булған етешһеҙлектәрҙе иң яҡын ваҡыт эсендә бөтөрөүҙән, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙә һәм уларҙың культура кимәлен күтәреүҙә мөһим сара булып торған культура-ағартыу эшенең бөтә тармаҡтарын ҡырҡа яҡшыртыуҙан тора.

Пәйге осорҙа культура-ағартыу эшенең байтаҡ өлөшө баҡсаларға, стадиондарға һәм башҡа ошондай асыҡ майҙандарға күсте. Шуға күрә партия ойошмалары уларҙың эшенә айырыуса иғтибар бирергә тейештәр. Баҡсаларҙың, стадиондарҙың эшен ҡырҡа яҡшыртыу һәм хеҙмәтсәндәр араһында культура-ағартыу эшен ойоштороуҙа ҡаланың тирә-яғындағы бай тәбиғи шарттарҙы киң файҙаланыу ҡаланың партия, совет, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының мөһим бурысы булып тора.

Тыныслыҡ өсөн, һуғышҡа һәм фашизмға ҡаршы

(„Ныҡлы тыныслыҡ өсөн, халыҡ демократияһы өсөн" газетаһы биттәренән)

15 июндә Бухарестә «Ныҡлы тыныслыҡ өсөн, халыҡ демократияһы өсөн» газетаһының нәүбәттәге 24-се (136) номеры баҫылып сыҡты.

Газетаның «Тыныслыҡ өсөн, һуғышҡа һәм фашизмға ҡаршы» тигән баш мәҡәләһе капиталистик илдәр хеҙмәтсәндәренең демократик хоҡуҡтар өсөн, күп кенә илдәрҙең государство режимдарен ныҡлы фашислаштырыуға ҡаршы көрәш мәсьәләләренә арналған. Һуңғы йылдарҙа «Америка традицияларын яҡлауҙың» тетән шартауы аҫтында һәм «ике партиялы системаның» ҡатнашлығында АҠШ-тың государство аппаратын фашислаштырыу сиктән тыш көсәйҙе. АҠШ-та ҡөрәттәй тыш хәл иғлан итеүҙә, эшселәргә ҡаршы булған Тафт-Хартли законының һәм демократияға ҡаршы башҡа күп кенә законарҙы ҡулланыуҙа, тыныслыҡ өсөн көрәшселәргә ҡаршы суд процестарында, АҠШ компартияһының 11 лидеры өҫтөнән хурлыҡлы судта, фашистик ойошмалар эшмәкәрлегенең көсәйеүендә, иғәнһеҙләндерелгән шовинизмда, антисемитизмда, расизмда, негрҙарҙы судһыҙ язалап үлтереүҙә ул үҙенең көүҙәләнешен тапты. АҠШ-та расисторҙең кешелеккә ҡаршы идеялары, миллионлаған кешеләрҙе ҡырып бөтөреүҙең кәрәклеген нигеҙләүсе һәр төрлө «теоретиктәрҙең» еләйәтсел һаташтыуҙары киң таратыла.

Күп кенә капиталистик илдәрҙә яңы һуғышты ҡеҙерләү һәм государство режимдарен фашислаштырыу, тип яҙа газета, — үҙ-ара органик бәйләнгән һәм бер-береһе артынан ҡабатланып килеүсе процестәр улар.

Халыҡ массалары империалистарҙың яңы эҙләнеүҙәренә тыныслыҡ өсөн көрәште көсәйтеү, фашизмға ҡаршы берҙәмлекте нығытыу һәм киңәйтеү менән яуап бирәләр. Тыныслыҡ өсөн көрәш фашизмға ҡаршы көрәш менән, хеҙмәтсәндәрҙең үҙҙәренең көндәлек талаптарын һәм демократик хоҡуҡтарын яҡлап сығыш яһауҙары менән, фашизмға ҡаршы киң фронтты төҙөү һәм нығытыу менән айырылғыһыҙ рәүештә бәйләнгән. Был хәрәкәт фашизмдың үсеүенә булышлыҡ итеүсе «Америка партияларының» милләткә ҡаршы политикаларын ҡыйыу һәм эҙмә-эҙлекле фашлау һәм беренсе нәүбәттә уң социалистик лидерҙарҙы фашлау менән бәйләнгән.

«Францияла парламент һайлауҙары алдынан» тигән мәҡәләлә Франция коммунистар партияһының үҙәк комитеты члены Жорж Коньо Франциялағы хәҙерге эске политик хәлде ентекләп һөйләп бирә. Автор Америка империализменең Франциялағы агрессив эшмәкәрлегенең көсәйеүе тураһында миҫалдар килтерә. Де Голлдең фашист бан киҫәрҙәренең активлашыуы был эшмәкәрлектең көүҙәләнеүсенең береһе булып тора. «Һуғышҡа ҡаршы, һуғышты ҡеҙерләүсе фашизмға ҡаршы, массаларҙың экономиканы хәрби рельстарға күсереү менән ҡырҡыулаша барған бөлгөнлегенә ҡаршы көрәшкән, — тип яҙа Ж. Коньо, — Франция коммунистар партияһы үҙ программаһы тирәһенә халыҡтың торған һайын киңерәк ҡатламын берләштерә».

Компартияның программаһы илде Америка баҫҡынсыларының яҙырылыуынан ҡотҡарыуҙан, фашизмға һәм һуғышҡа ҡаршы көрәш ойоштороуҙан тора.

Американың күренекле яҙыусыһы Говард Фаст үҙенең хатында бөтә намыҫлы кешеләрҙе АҠШ-тағы суд эҙәрләүенә тартылған тыныслыҡ өсөн көрәшселәрҙе яҡлап сығырға саҡыра. Был тыныслыҡ яҡлаусылар араһында негр, тыныслыҡты яҡлау буйынса Америка информация үҙәгенең етәксеһе 83 йәшлек доктор Дюбуа бар. «Был ваҡиғала, — тип яҙа Говард Фаст, — тыныслыҡ һөйөүсе кешелек донъяһының иң яҡшы өмәттәре судҡа бирелгән».

Великобритания коммунистар партияһы генеральный секретары урынбаҫары Джордж Мэттьюз «Британияла Тыныслыҡ Пакты өсөн хәрәкәт» тигән мәҡәләһендә былай тип яҙа: күп меңләгән инглиздәр яңы һуғышты булдырмауға үҙҙәренең ныҡлы ынтылыштарын белдерәләр, тыныслыҡ өсөн көрәштә актив ҡатнашалар. Пламутта бер ҡарт пенсионер Тыныслыҡ Пакты төҙөү тураһындағы Мөрәжәғәткә 1000-дән артыҡ ҡултамға йыйғаны ла инде; Шеффелдтең бер урамында Мөрәжәғәткә ҡул ҡуйыуҙы һорап 60 кешегә мөрәжәғәт ителгән, уларҙың 55-е ҡул ҡуйған. Глазгола бер көн эсендә генә 19 кеше меңдән артыҡ ҡултамға йыйнаған, Шотландиялағы бер ҡорос ҡойоу заводының 66 эшсеһенән 65-е Мөрәжәғәткә ҡул ҡуйған. Ләкин «**шуны асыҡтан-асыҡ танырға кәрәк**, — тип яҙа Мэттьюз, — **был йәһәттән Британия башҡа илдәрҙән бик ныҡ артта ҡала, артабан быһың менән килешергә ярамай**». Ҡултамғалар йыйнау буйынса кампанияның тәүге ике аҙнаһында Мөрәжәғәткә 100 меңдән артыҡ кеше ҡул ҡуйған. Коммунистар партияһы был цифрҙы сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәслек тип иҫәпләй һәм Тыныслыҡ Пакты өсөн кампанияны тағы ла киңерәк йәйелдереү өсөн тыныслыҡ яҡлаусылар хәрәкәтенә ярҙам итергә уйлай.

«Халыҡ демократик Румынияла фәндең күтәрелеше»—Румыния халыҡ республикаһы Фәндәр Академияһының президенты Траян Савулескуҙың мәҡәләһе шулай исемләнгән.

Буржуаз-помещиктәр Румынияһында Фәндәр Академияһы фәнде һәм культураны халыҡ достояниеһенә әүерелдереү өсөн бер ниндәй ҙә көс һалманы. Практиканан һәм халыҡ торошонан ситләшкән «саф фән» теорияһын өндәнеләр. Был эксплуататор синыфтар һәм румын экономикаһының «бары тик ауыл хужалығы» характерендә булыуын һаҡлауға ынтылған сит ил империалистарә интересарында эшләнде. Официаль фән вәкилдәренең милли ғорурлығы юҡ ине, улар бөйөк халыҡ иждадына һәм уның данлы традицияларына һанға һуҡмай ҡаранылар. Академик хеҙмәттәрҙең күпселеге сит ил телдәрендә баҫып сығарылды. Румын телен өйрәнеү буйынса журнал да француз телендә баҫылды.

Власте эшселәр синыфы яулап алғандан һуң Румыния Фәндәр Академияһының эшмәкәрлеге яңы нигеҙҙә ҡоролдо, фән халыҡ достояниеһе булып әүерелә башланы. Хеҙмәтсәндәр менән фән деятелдәре араһында яңы мөнәсәбәттәр урынлаштырыла. Хәҙер Румыния Фәндәр Академияһы тәбиғәт фәнлемен, физиканы, математиканы, техник һәм социаль фәндәрҙе үҫтереүгә ҙур иғтибар бирә. Күп кенә яңы институттар төҙөлдө. 1950 йылда фәнде үҫтереү эшенә государствобыҙ бер миллиардтан артыҡ лей бүлде. Һуңғы ике йыл эсендә Академия бик ҙур фәнни-тикшеренеү эшен башҡарҙы. Ул халыҡ хужалығын һәм беренсе нәүбәттә промышленносте үҫтереү буйынса күп кенә мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ярҙам итте. Румыния фәне киң рәүештә алдынғы совет фәненә таяна.

«Коммунистар һәм эшселәр партияларында» тигән бүлектә газета төрлө илдәрҙән белдереүҙәр баҫып сығарған. Болгария Коммунистар партияһының үҙәк комитеты игенселек министерствоһы эргәһендә Политик управление, машина-трактор станциялары эргәһендә политик бүлектәр ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул иткән. Үҙәк комитет, тип әйтелә ҡарарҙа, хеҙмәтсән кооператив игенселек хужалыҡтарын (ТКЗХ), государство игенселек хужалыҡтарын һәм МТС-тарҙы ойоштороу-хужалыҡ һәм политик яҡтан нығытыу хәҙерге ваҡытта партия һәм государствоның төп бурысы булып тора, тип иҫәпләй. Ҡарарға ярашлы рәүештә, һәр бер МТС-та политик бүлек ойоштороласаҡ, ул партия, профсоюз һәм йәштәр ойошмаларына етәкселек итәсәк һәм партия-политик эш өсөн тулы яуаплы буласаҡ.

Албания Хеҙмәт партияһы үҙәк комитетенең нәүбәттән тыш пленумы ауыл хужалығын социалистик үҙгәртеп ҡороу тураһындағы мәсьәләне ҡараған, был өлкәлә хәҙер төп бурыс ауыл хужалығы производство кооперативтәренең һанын арттырыуҙан түгел, ә йәшәп килгән кооперативтарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуҙан тора, тип билдәләгән.

Ошо йылдың майында Индия Коммунистар партияһы үҙәк комитетенең ултырышы булды. Был ултырышта бер күнелдән Индия коммунистар партияһының программа проекты ҡабул ителгән. Үҙәк комитет илдең бөтә өлкәштәрендә партия ойошмаларының һәм партияның бөтә члендәренең тырышлыҡтарын эшселәр синыфы менән крәҫтиәндәрҙең союзын нығытыуға, профсоюз, крәҫтиәндәр һәм башҡа массовый ойошмаларҙы аяҡҡа баҫтырыуға туплерға, шулай уҡ эшселәрҙең, крәҫтиәндәрҙең һәм халыҡтың башҡа синыфтарына һәм ҡатламдарына уларҙың беренсе нәүбәттәге талаптарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәштә ярҙам итергә һәм тыныслыҡ, демократия һәм азатлыҡ өсөн ҡеүәтле массовый хәрәкәтте үҫтерергә ҡарар ҡабул иткән. Үҙәк комитет иптәш Раджешвар Раоны партияның генеральный секретары вазифаһынан бушатҡан. Ә хәҙерге партияның генеральный секретары булмаясаҡ, политбюро партия үҙәк комитетенең секретариаты кеүек үк хәрәкәт итәсәк, ә иптәш Аджой Гхош уға етәкселек итәсәк. Үҙәк комитет мөмкин тиклем ҡыҫҡа срокта программала һәм партияның политикаһы тураһындағы белдереүҙә һөйләп бирелгән политик етәкселекте конкретлаштыреу һәм партияның үҙәк етәкселегенә тейешле үҙгәрештәр индереү өсөн партияның Бөтә Индия конференцияһын саҡырырға ҡарар иткән.

Шулай уҡ номерҙа **Пабло Неруданың** «Латин Америкаһы интеллигенцияһына» тигән мәҡәләһе, **Ян Марентең** политик заметкалары һәм башҡа материалдар баҫып сығарылған.

Бухарест. Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донья Советы Мөрәжәғәтенә Бөйөк милли собраниеә депутаттары тантаналы обстановкала ҡул ҡуйҙылар.

Һүрәттә: Министрҙәр Советы председателенең урынбаҫары, Румыния эшселәр партияһының генеральный секретары Георгиу-Деж Мөрәжәғәткә ҡул ҡуя.

Аджерпресс фотоһы.

Һайлауҙарҙын һөҙөмтәләре тураһында Франция коммунистәр партияһынын белдереүе

ПАРИЖ, 19 июнь. (ТАСС). Францияның коммунистар партияһы Франциялағы парламент һайлауҙарының йомғаҡтары тураһында белдереү иғлан итте. Белдереүҙә былай тип әйтелә:

Республикан һәм ҡаршылыҡ күрһәтеүҙең фашизмға ҡаршы союзының Франция коммунистар партияһы тарафынан күрһәтелгән исемлектәре һайлауҙарҙа биш миллион тауыш йыйнанылар. Был һайлауҙар тағы ла башҡа партиялар менән һәм, атап әйткәндә, РПФ-тең фашистик партияһына сағыштырғанда, коммунистар партияһын бик ныҡ алға күтәрҙеләр.

Коммунистар партияһы тарафынан күрһәтелгән исемлектәр йыйнаған 5 миллион тауыш һуғыш тоҡандырыусылар юлында серьез тотҡарлыҡ тыуҙыра. 17 июндә өлгәшелгән еңеү коммунистар партияһы үткәргән дөрөҫ берҙәмлек политикаһының, уның милли бойондороҡһоҙлоҡ һәм тыныслыҡ өсөн, прогрессив һәм азатлыҡ өсөн арымай-талмай көрәшеүенең һөҙөмтәһе булып тора.

Америка миллиардерҙәре һәм уларҙың француз вассалдары һайлауҙар коммунистар партияһын көсһеҙләндерер һәм блокировать итеүҙең ҡот осҡос системаһы һөҙөмтәһендә уның парламент группаһын бер нисә депутатҡа ғына ҡалдырыр тип иҫәп тотҡайнылар. Франция халҡы был планды өҙҙә. Ул бер йөҙҙән артыҡ коммунист депутаттарҙы һайланы. Ләкин, яуыз һайлау хәйләһе арҡаһында, беҙҙең партиябыҙҙың бер нисә уңлаған парламент урыны урланды. Күп кенә департаменттарҙа йыйылған тауыштар һаны буйынса беренсе урынды алған коммунистар исемлегенә бер генә лә депутат мандаты бирелмәне, шул уҡ ваҡытта аҙ һанда тауыш алған икенсе исемлек буйынса бер нисә депутат үткәрелде.

Уң социалистарҙың етәкселәре үҙҙәренең блокировать итеүҙәре һәм үҙҙәренең бөтә политикалары менән яңы милли собраниела власка асыҡтан-асыҡ реакцион һәм фашизм яҡлы хөкүмәтте сиктерерге ҡарар иткән аҙсылыҡты булдырыуға булышлыҡ итеүҙәре өсөн ныҡ яуаплылар. Был хөкүмәт, налогтарҙың һәм ҡыйбатсылыҡтың уһан башҡа ла ауыр йөгөн көсәйтеп, демократик азатлыҡтарҙы аяҡ аҫтына һалып тапап, уҡытыуҙың мәғариф характерен юҡ итеп, социаль ҡаҙаныштарҙы бөтөрөп, ҡот осҡос һуғышты әҙерләүҙе тиҙләтеп, РПФ партияһына һәм уның фашистик башлығы — де Голлгә юл асып, америкал хужаларҙың үҫә барған талаптарын аныҡ үтәү тураһында ғына хәстәрлек күрәсәк.

Франция коммунистар партияһы үҙенең депутаттарынан был ниәттәрҙе ғәмәлгә ашырыуға ҡамасаулау өсөн тырышлыҡтарҙы аямауҙы талап итә. Ул һуғышты ла, фашизмде лә теләмәүсе бөтә хеҙмәтсәндәрҙе, уларҙың һайлауҙарҙа коммунист депутаттарғамы йәки башҡа депутаттарғамы тауыш биреүҙәренә ҡарамаҫтан, үҙҙәренең ныҡлы союздары менән был ниәттәрҙе өҙөүгә саҡыра. Хеҙмәтсәндәрҙең талабын ҡәнәғәтләндереү өсөн көрәштә өлгәшелгән хәрәкәт берҙәмлеге, изгә теләкле булған бөтә французларҙың киң рәүештә берләшеүе азатлыҡты һәм тыныслыҡты яҡлауҙы тәьмин итә ала һәм тәьмин итергә тейеш.

Францияларғы парламент һайлауҙарына ҡарата

ПАРИЖ, 19 июнь. (ТАСС). Франс пресс агентствоһының белдереүенән күренгәненсә, бөгөн кис эске эштәр министерствоһы метрополиялағы һайлауҙарҙың һөҙөмтәләре тураһында (Түбәнге Рейн департаментен индермәйенсә) түбәндәге статистик мәғлүмәттәрҙе иғлан иткән:

Теркәлгән һайлаусыларҙың һаны — 24.544.565, һайлауҙарҙа 19.200.000 кеше ҡатнашҡан, 18.678.013 бюллетень ысын тип табылған, улар политик партиялар араһында түбәндәгесә бүленгән: коммунистар партияһы — 5.001.618, социалистик партия — 2.744.924, һул республикансәр берекмәһе — 2.194.213, «халыҡ-республикан хәрәкәт» (МРП)—2.225.353, «урта позициялылар» — 2.472.016, РПФ (деголсе партия) — 4.039.889.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 20 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 20 июнда бөтә фронттарҙа ла Корея Халыҡ армияһының частары Ҡытай добровольцтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Америка-Англия интервенттарының ғәскәрҙәренә һәм лисынмансы ғәскәрҙәргә ҡаршы ҡаты һуғыштар алып барыуҙы дауам иттеләр, уның йәнле көсөнә һәм техникаһына серьез юғалтыуҙар килтерҙеләр, тип хәбәр итте.

19 июнгә ҡаршы төндә Халыҡ армияһының төнгө бомбаға тотоу авиацияһының соединениелары Америка ғәскәрҙәре туплаған күп кенә пункттарҙы бомбаға тоттолар. Бомбаға тотоу һөҙөмтәһендә 7 пунктта ҙур янғындар барлыҡҡа килде һәм 10 пунктта көслө шартлауҙар билдәләнде.

19 июндә көнсығыш яр буйында хәрәкәт итеүсе Халыҡ армияһының частары Бен Чжаҡа (Сончжингә) яҡын урында ҡалаға утҡа тоторға маташҡан дошмандың бер эсминецен һыуға батырғандар.

20 июнда дошман самолеттарына атыусы уҡсылар дошмандың дүрт самолетын атып төшөргәндәр.

Америка газетаһы Кореяла Америка ғәскәрҙәренең юғалтыуҙарын йәшереүҙә Трумэн хөкүмәтен ғәйепләй

НЬЮ-ЙОРК, 19 июнь. (ТАСС). «Чикаго дейли ньюс» газетаһын сығарыусы Джон Найт, Америка ғәскәрҙәре Кореяла кисергән юғалтыуҙарҙың ысын күләмдәрен Трумэн хөкүмәте халыҡтан йәшерә, тип яҙа.

Трумэнгә мөрәжәғәт итеп, Найт былай тип яҙа:

«Юғалтыуҙар тураһында мәғлүмәтте *һуғыш операцияларынан һуң бер нисә аҙна* үткәс иғлан итәләр, һәм шулай итеп был юғалтыуҙарҙың беҙҙең ғәскәрҙәребеҙ күпмегә төшкәнлеге тураһында күҙ алдына килтереп булмай.

Цензорҙар шулай уҡ, уларҙың фекере буйынса, Америка халҡының «мораль ғиләнә зыян килтерә» алыуы мөмкин булған теләһә ниндәй мәғлүмәттәрҙе бесерәтәләр.

Трумэн әфәнде, халыҡтың мораль таяныс ысынлап та «яҡлау» был цензураның маҡсаты булып торамы йәки ул беҙҙең хөкүмәтебеҙгә туранан-тура ҡағылған серьез политик эҙемтәләрҙе булдырмауға иҫәпләнгәнме».

Тыныслыҡ өсөн көрәш лозунгыһы аҫтында

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһы исполкомының бишенсе сессияһының асылыуы

СОФИЯ, 21 июнь. (ТАСС). Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһы (МДФЖ) Башҡарма комитетенең 20 июндә Болгария Халыҡ собраниеһе бинаһында тантаналы рәүештә бишенсе сессияһы асылды.

21 июндәге иртәнге ултырышта МДФЖ Исполкомы Америка империалистарының Кореялағы йыртҡыслыҡтарын тикшереү буйынса ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһы махсус комиссияһының докладын тыңланы.

Ибраһим АБДУЛЛИН

ҠӘҘЕРЛЕ ҠУНАҠ

(Хикәйә)

Иптәш Исәкәевтең ҡыҙыҡ ҡына яҡтары бар. Ул үҙенең кадрҙарын туранан-тураға, күҙгә-күҙ ҡарап түгел, ә үҙен белдертмәй килеп, өйрәнергә, аҙаҡ үҙенең ошо ғәҙәте менән бер аҙ маһайыбыраҡ һөйләргә лә ярата. Ысын булһа, шулай һөйләйҙәр. Имеш, уның ҡатыны, Сажида — ҡыҙ, үҙе — егет ваҡытта, Сажиданы ул, ә Сажида уны белмәгән саҡта, уның янына икенсе кеше булып барып, Исәкәев тураһында һораштырып та йөрөгән.

Иптәш Исәкәевтең тағы бер ҡыҙыҡ ғәҙәте бар. Ул ялағайҙарҙы яратмай. Был хаҡта һөйләнгән телмәрҙәрҙе бер ергә йыйһаң, һайланма әҫәрҙәр кеүек, бер том булыр ине. Иптәш Исәкәевте осондормайынса ғына маҡтап килгәндә, ләкин тигән тиҫкәре һүҙ килеп ҡушыла шул. Иптәш Исәкәевкә «Яхия Сафич», тип әйтһәң ирей ҙә төшә. «Иптәш Исәкәев» тип эндәшһәң дә ул түңмәй, ләкин күңеле өшөп китә инде. Яңы кейеп килгән костюмен күреп, «ютло булһын, өҫтөгөҙҙә туҙһын» тиһәң дә риза булмағандай ғына «шулай булһын», тип ҡуя.

Тик яҡын туған-тумасаларына ғына ул үҙенә ялағайланыусылар тураһында—«йылы ҡарашлы кешеләр, начальниктәренең ҡәҙерен беләләр» тип маҡтай һәм ул кешеләргә иптәш Исәкәев йәрәк йылыһын йөрөтә.

Күреп тораһығыҙ, кеше бик ҡатмарлы. Ә иптәш Исәкәев айырыуса, кәбеҫтә кеүек, ҡатлы-ҡатлы кеше.

Апрель башында уҡ отпускылар графиге министр тарафынан раҫлангас, ҡоштарҙың иң дәртле, сәскәләрҙең иң гүзәл, кешеләрҙең поэзияға иң тәрән бирелгән осоронда, ул 15 июнда министр эргәһенә инә һәм былала менән ҡапланған ҙур имән өҫтәлгә ғаризаһын һала.

Быйыл ул бараһы курортта (уға буйһонған курорт) начальство һәм бик күп кенә хеҙмәтләндереүсе персонал — врачтар, сестралар яңы. Хатта ул баш врачты раҫлағанда ла Мәскәүҙә командировкала булып ҡалды.

— Ялағай түгелме икән, — тине ул Сажида ханымдан һорап һәм шунда уҡ бик тәүәккәл план ҡороп, — бына нәмә, беҙ уны хәҙер һынайбыҙ. Ул мине, мин уны белмәйем. Иртәгә, мин киткәс, телефондан хәбәр ит.

— Яхия Сафич ике көндән һеҙгә ял итергә килә, тиң.

Ҡатыны иркәләнеп тә, үпкәләп тә:

— Яхия, ташла шул ғәҙәтеңде, тип ҡараһа ла, иптәш Исәкәев һүҙен бирмәне.

— Үлгәнсе ташламам. Мин үҙем ялағай түгел һәм минең работниктарем, миңә буйһонған кешеләр ҙә ялағай булмаһындар.

Иптәш Исәкәевтең килеүенә, курзалда өсәнсе рәттә, егерме икенсе өҫтәл янында ашауына бер кем иғтибар итмәне. Тап ул көндә ҡырҡлап кешене ҡабул иттеләр. Мәшәҡәт күп булды. Ә иптәш Исәкәев үҙенең тоҫа-килбәте, кейем-һалымы менән дә башҡаларҙан айырылып тормағас, уға айырым түгел, ә үҙәк йылытыу системаһынан квартиралар, бүлмәләргә таратылған йылылыҡ кеүек, дөйөм иғтибар ғына булды.

Пеҙәрләгән ваҡ-төйәк ваҡиғаларға бай, ә ҙур ваҡиғаларға ярлы курорттың беренсе көнө үҙып та китте. Иптәш Исәкәев һаҡлыҡтан күршеһе менән дә юнләп танышманы, регистратурала ла үҙен «врач» тип кенә яҙҙырҙы.

Икенсе көндә ул иртә уҡ торҙо. Һыу буйынан урап ҡайтты. Фонтанды әйләнеп сыҡты. Ниңәлер, магазин янына ла барып килде.

Ике тамсы һыу кеүек, икенсе көн дә, беренсе көн һымаҡ, тыныс үтте. Уның урынына өсөнсө көн иртә үҡ шаулы башланды.

— Их, был Сажиданы, — тине иптәш Исәкәев, — әйттем мин уға ике көндән тип, юҡ, ул өс көндән тигән икән, — ниңә һуҙырға инде. — Ул ике ҡулын да салбар кеҫәһенә тығып, көйөрөлеп һуланы. Ағымлы йылмайып:

— Ашар алдынан аптекгә аҙҙырып алабыҙмы? — тип күршеһенә киоскы эргәһенән урап килергә тәҡдим итте һәм туғыҙ һум ваҡ аҡса ла әҙерләй башланы.

Сестраларҙың югергәләп йөрөүҙәре поезд килергә сәғәт ярым ҡалғас, бигерәк тә ныҡ һиҙелде.

Әлегә тиклем буш торған уң бишенсе номерле палата асылды. Яңы простыня, одеялдар йәйелде. Ҡыҫҡа буйлы, етен сәсле сестра (исемен дә белмәйем әле) сәскәләр букете алып инеп, тумбочкаға ҡуйҙы. Бүлек начальнигы врач Иванов һәм аҡ халат кейгән ике кеше палатаны ҡарап сыҡтылар. Етеҙ ҡуллы сестра-хозяйка библиотеканан ике китап алып ҡайтып, тәҙрә төбөнә ҡуйҙы.

— Мин беләм, ул был китаптарҙы уҡымаған. Миңә үтә-үтә оҡшанылар. Уға ла оҡшарҙар әле, — тине ул һөйөнөп.

Аҡ халатлылар төркөмә аҫҡы ҡатҡа төшөп киткәс, иптәш Исәкәев, палатаға инеп, теге китаптарҙы ла ҡарамаҡсы булғайны, ләкин тыйылды. Әгәр уҡылған булһа? Бары бер уҡырмын.

— Бер ҡараһаң начальник булыуы ла күңелле эш. Работниктарың ярата, һиңә буйһонған учреждениелар ҙа һиңә йылы ҡараш. Ләкин курорт директоры ялағайлана белә икән, — тип приговор сығарҙы ул һәм шләпәһен ҡулына тотоп, аҫҡа төшөп китте. Ул төшкәндә өс сестра, начальник Иванов автобусҡа шаулашып ултыралар ине.

— Вася, ҡуҙғал, — тине отделение начальнигы, — юғиһә сестралар ҡунаҡҡа ултырырға урын да ҡалдырмаҫтар, һаман букет килтерәләр.

Зәңгәр автобус ҡуҙғалды.

— Мин эгоист түгел, әлбиттә, — тине иптәш Исәкәев фонтан эргәһенә барып ултырғас, — букеттарҙың береһен тумбочка өҫтөнә, икенсеһен тәҙрә төбөнә ҡуйырмын, өсөнсөһөн ҡыҙым Диләрәғә, дүртенсеһен Сажидаға тоттороромон. Ә ҡалғандарын сестраларға өләшермен. Ниңә миңә шул тиклем букет. Мин ҡыҙ кешеме, әллә берәр артисме. Мин бит ни бары урта ҡуллы бер начальник... Ул уйҙары менән шул тиклем тәрәнгә инеп киткәс, борола ултырҙы. Фонтандың һалҡын тамсылары йылы тойғолар уятты. Юҡ, ситкә ҡарап ултырһа ла ул, балға буялған умартасы торттарҙан ҡотола алмаған кеүек, уйҙарынан арына алманы.

...Бына поезд килеп етер. Биш-алты кеше тын алырға ла батырсылыҡ итмәй минең вагондан сыҡҡанымды көтөп торор. Моғайын телефон аша береһенән минең тоҫ-килбәтемде лә һорашҡандарҙыр. Ҡарайҙар — юҡ, эҙләйҙәр — юҡ. Шунан Сажида ханым менән ҡыҙым Диләрә автобус эргәһенә килеп: был санаторий машинаһымы? — тип һорарҙар. Уның һорауына яуап бирмәйенсә уҡ: ғәфү итегеҙ, һеҙ иптәш Исәкәев, тигән кешене белмәйһегеҙме? — тип тикшерә башларҙар. Ҡыҙым Диләрә әсәһенең киң еңенән тартыр. Сажида ханым ике алтын тешен күрһәтеп көләр һәм:

— Исәкәев... ул бит ике көн буйы һеҙҙә ял итә, — тиер. Тегеләр ышанмаҫтар. Бер-береһенә ҡарашып шаҡ ҡатырҙар. Берәр несә күңелле ҡыҙ ҡаушауынан букетен перронға төшөрөп ебәрер. Унан ары Сажида ханым минең палата номерен әйтер һәм аҙаҡ, ин һуңғы сара итеп, редиҡюленән минең быйыл аҙ Мәскәүҙә командировкала төшкән карточкамды күрһәтер. Арала иң бәләкәйеренә һәм етеҙеренә, (аптекала эшләүсе сестра, исемен һис тә атлай алмайым). Сажида ханымдың сумкаһын алыр, икенсе берәү ҡыҙым Диләрәнең плащен тотор (ах, был халыҡты, минең исем, электр тоғы кеүек, тәьҫир итте бит). Машинаға күтәргәндәй алып инерҙәр. Тағалыҡ, хәл-әхүәлде һорашырҙар.

Ҡапыл ул бороло ҡараны. Зәңгәр автобус парад ишеге төбөнә туҡтаны. (Килештерәләр бит). Ул юрп керфек тә ҡаҡманы. Ишек асылды. Алдан бүлек начальнигы сыҡты. Унан ары... унан ары бер ҡосаҡ букет тотҡан... Кем ул? Кем һун ул? Йәп-йәш ҡыҙыҡай. Ул һикереп торғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Был ҡәҙерле ҡунаҡ артынан уның Сажидаһе менән ҡыҙы Диләрә сыҡты. Әһә, — тине ул ике ҡулын да салбар кеҫәһенә тығып, — Сажида ханым букеттарен өләшергә лә өлгөргән. «Осло күҙле» Диләрә атайын да күреп өлгөрҙө. Ул «атай,— атай» тип ҡысҡыра-ҡысҡыра йүгереп килеп, уның муйынына аҫылынды.

— Атай, беләһеңме беҙ кем менән килдек, — тине Диләрә шатлығынан сәсәп, — Социалистик Хеҙмәт Геройы менән, ул әлек, күптән инде, мин юҡ саҡта әле, был курортта уборщица булып эшләгән. Унан ауылын һағынып ҡайтып киткән. Хәҙер уға әлек үҙе иҙәнен йыуып, таҙартып йөрөгән бүлмәне әҙерләгәндәр. Атай, ул шундай аҡыллы, үҙе герой, ә үҙе юл буйы миңә бойҙай үҫтереү тураһында һөйләп килде. Бына ул миңә бер букетен дә бирҙе.

— Нимә булды, юнләп кенә һөйләп бир әле, — тине иптәш Исәкәев Сажиданың иҫәнлеген алыу менән.

— Нимә булһын... Уф, тирләнем, бер нимә лә булманы, вагондан сыҡһам, бер төркөм ҡалыҡ сәскәләр тотоп тора. Ҡыҙым, бар әле, берәр стакан һыу килтер. Мин һине ҡаршылайҙарҙыр тип уйланым. Тиле, һинен һүҙенә ҡарап барҙым да, «һеҙ иптәш Исәкәевте көтәһегеҙме?» — тип һораным. Әле лә ярай үҙемдең кем икәнлегемде белгертмәнем. — Юҡ, тиҙәр, ул бит инде беҙҙә ике көн буйы ял итә. Беҙ фәлән кешене ҡаршылайбыҙ, тиҙәр. Минен күҙҙәрем дүрт булды. Ни эшләргә белмәйем, ҡыҙымдың беләгенән семетеп тә алғанмын. Автобусҡа ултырғас, бер бәләкәй сестра ни буйы лығырҙап килде. Беҙҙә, ти минең өсөн дә, эшсе өсөн дә, инженерға ла колхозсыға ла бер үк шарттар, бер үк асыҡ сырай, яҡты йөҙ, тәмле аш, таҙа һыу, ти. Дөрөҫө лә шулай инде. Яхия, һин бит бында начальник булып түрә лә булып килмәйһен, ә башҡалар һымаҡ, рядовой курортник булып ҡына һин, ял итәһен.

— Регистратураға барырға кәрәк, — тине ул Диләрә алып килгән һыуҙы зауҡ менән эсеп. — Ҡыҙым, һин атайың менән ултырып тор.

— Ҡыҙым, тине, беренсе, икенсе уйҙарҙы үткәргән һәм инде ныҡ ҡына айныған иптәш Исәкәев. — әллә беҙ ҙә бер пойҙы ҡарап килабеҙме? Үҙебеҙ улар үҫтергән икмәкте ашайбыҙ, үҙебеҙ үҫтереүселәрен таранҡтан белмайбеҙ.

Шул ваҡиғанан һуң, ысын булһа халыҡ, иптәш Исәкәевте үҙен белгертеп йөрөргә лә яратмай, бик сәсә һөйләгән кешеләрҙе лә айырыуса яҡын күрмәй, ә һәр кемдең эшенә ҡарап баһа бирә башлаған, тип һөйләйҙәр. Халыҡ белгәс, ысындыр инде.

Редактор F. F. ҒАФАРОВ

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02528 Эльле газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№122(8839)
1951 йыл
23 ИЮНЬ
шәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА. Х. Ғәлимов. — Район партия активе йыйылышы (1-се бит).
УРОЖАЙҘЫ ЙЫЙНАП АЛЫУҘЫ ТИҘ ҺӘМ ЮҒАЛТЫУҺЫҘ ҮТКӘРӘЙЕК! Шишмә МТС-ы комбайнеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Арслан Кирәевтең республика МТС-тарының һәм совхоздарының бөтә комбайнерҙарына хаты (1-се бит).
Б. Шнеер. — Хужалыҡ тәрбиәлешенә большевистик етәкселек программаһы (2-се бит).
СТЕНА ГАЗЕТАЛАРЫНЫҢ ЭШ ТӘЖРИБӘЛӘРЕНӘН. З. Исмәғилов. — Юғары урожай алыу өсөн көрәштә стена газеталары (2-се бит).
Ф. Кондратьев. — Алдынғы методтарҙы производствоға индереү (2-се бит).
ОКТЯБРЬСКИЙҘАН ХАТТАР. Ә. Бикчентаев. — 1. Башҡортостан нефтеһен үҫтерә (3-сө бит).
М. Сирәзетдинова. — Һауылын һаҡлау эштәрен артабан яҡшыртайыҡ (3-сө бит).
А. Николаев. — Комбайн менән урожай йыйнау мастеры (3-сө бит).
Редакцияға хаттар (3-сө бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).
Корея патриоттарының батыр подвигтары (4-се бит).

Комбайнерҙар әҙерләүҙе большевиктарса ойоштороpға

Беҙҙең социалистик ауыл хужалығыбыҙ фән һәм техника нигеҙендә үҫтерелә. Игенселектә ер һөрөү, ашлыҡ сәсеү, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү һәм урожай йыйнау эштәре нигеҙҙә машиналар көсө менән башҡарыла. Республикабыҙҙа хәҙер 140 МТС, 7 ЛЭС һәм 2 ЛМС бар. Беҙҙә МТС-тар тарафынан хеҙмәтләндерелмәгән колхоз юҡ. Шулай уҡ республикабыҙ совхоздарында ла техника байлығы бик ҙур. Шуның менән бергә, механизацияның кимәле йылдан-йыл арттырыла. Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙың ауыл хужалығы бик күп яңы машиналар—көйәтле тракторҙар, комбайндар, шул иҫәптән үҙе йөрөй торған комбайндар һәм үҙе йөрөй торған бесән саҡҡыстар, шулай уҡ башҡа ҡатмарлы ауыл хужалығы машиналары алды.

Большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте ауыл хужалығына даими ярҙамдар күрһәтеп, машиналарҙың һаҡлыҡ менән файҙаланылыуын, юғары етештереүсәнлектә эшләтелеүен талап итә. Быныц өсөн бай техникаға оҫта эйә булған механизаторҙар кадрҙары йылдан-йыл күберәк талап ителә. Юлбашсыбыҙ иптәш Сталин, беҙҙең совет кадрҙарыбыҙҙы донъялағы иң ҡиммәтле капиталға тиңләп, улар тураһында, шул иҫәптән, комбайнерҙар тураһында даими хәстәрлек күрергә өйрәтә. **«Игенселеккә комбайн индереү һәм күп һанлы комбайнерҙар һәм комбайнеркалар кадрҙарын үҫтереү, — ти иптәш Сталин, — беренсе дәрәжәләге бурыс булып тора».**

Башҡортостанда ауыл хужалығы механизаторҙары әҙерләү буйынса 11 мәктәп бар, шулай уҡ МТС-тар һәм совхоздар эргәһендә курстар эшләйҙәр. Улар Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министрствоһының планы буйынса талап ителгән бөтә механизаторҙарҙы әҙерләргә тейештәр.

Комбайнерҙар кадрҙары әҙерләүҙә айырым мәктәптәр һәм курстар уңышлы эшләйҙәр. Дәүләкән механизаторҙар мәктәбе 454 механизатор, шул иҫәптән, күп кенә комбайнерҙар етештерҙе. Бәләбәй механизация мәктәбендә былтыр уҡыуҙа өлгәшеү кимәле 97,6 процент тәшкил итте. Баҡалы механизация мәктәбе лә кадрҙар әҙерләү планын үтәй. Шулай уҡ алдынғы МТС-тар комбайнерҙар кадрҙары әҙерләүҙә яҡшы һөҙөмтәләр бирәләр. Дәүләкән Күргәҙмә-терәк МТС-ындағы курста быйыл 20-нән артыҡ механизатор уҡытып сығарылды. Шаран, Белокатай, Байҡы һәм башҡа МТС-тар эргәһендәге курстар ҙа комбайнерҙар әҙерләү планын арттырып үтәнеләр.

Ләкин республикабыҙҙа комбайнерҙар әҙерләүҙә күпселек мәктәптәр һәм курстар ҡәнәғәтләнерлек эшләмәйҙәр. Учалы (директоры иптәш Мышкин) һәм Емаш (директор вазифаһын үтәүсе иптәш Солтангәрәев) механизаторҙар мәктәптәре комбайнерҙар әҙерләүҙе өҙәләр. Ерекле, Михайловка, Таймас, Аслы күл һәм башҡа бик күп МТС-тарҙа ла был эш һис ҡәнәғәтләнерлек алып барылмай. Ҡарыш, Бишенде, Ямады һәм башҡа күп кенә МТС-тарҙа үҙе йөрөй торған комбайндар өсөн кадрҙар етешмәй.

Күп кенә райондарҙа партия һәм совет ойошмалары комбайнерҙар әҙерләү эше менән даими хәстәрлек күрмәйҙәр. Благовар районында 8 һәм Янауыл районында 27 комбайнер, шул иҫәптән, үҙе йөрөй торған комбайндар өсөн 22 комбайнер етешмәүен тик шуның менән генә аңлатырға кәрәк. МТС һәм район ауыл хужалығы бүлектәре етәкселәре комбайнерҙарҙы һәм уларҙың ярҙамсыларын әҙерләүгә, был маҡсатта кешеләрҙе һайлап алыуға тейешле иғтибар бирмәйҙәр. Юғары квалификациялы комбайнерҙар әҙерләү өсөн, бигерәк тә, тәжрибәле комбайнер ярҙамсыларын, үҙе йөрөй торған комбайндарҙа эшләү өсөн тәжрибәле трактористарҙы һәм шоферҙарҙы, комбайнер ярҙамсылары әҙерләү өсөн комбайн агрегатын хеҙмәтләндереүҙә эшләгән иң алдынғы колхозсыларҙы уҡытырға кәрәк. Ләкин был талап һаҡланмай. Шуның арҡаһында йыш ҡына хәлдәрҙә мәктәптәргә һәм курстарға эш тәжрибәһе булмаған кешеләр ебәреләләр. Был, беренсенән, уҡыуҙа өлгәшмәү процентын ҙурайта һәм, икенсенән, техник түбән белемле кадрҙар сығарыуға һәм һөҙөмтәлә эштә машиналарҙың тулы ҡеүәтендә файҙаланыла алмауына алып бара. Олө Теләк, Нуримаң, Бүздәк, Охлебинин һәм башҡа күп МТС-тарҙа быйыл яҙғы осорҙа машиналарҙың сиктән тыш насар эшләүҙәре, нигеҙҙә, кадрҙарға бәйле булыуы менән аңлатыла.

Бөтә эштә лә уңышты кадрҙар хәл итәләр. Комбайнер кадрҙары әҙерләү эшендә лә быны онотоpға ярамай. Былтыр күпселек МТС-тар комбайнерҙар кадрҙары әҙерләүҙе үҙ ваҡытында ойошторманылар. Ошондай уҡ етешһеҙлектәр Нуримаң, Шаран, Покровка, Балтач, Бишбүләк, Матрай һәм башҡа райондарҙа быйыл да ҡабатлана. Воскресен, Олө Теләк, Ҡыйғы, Көйөргәҙе һәм башҡа районлар комбайнерҙар менән, айырыуса үҙе йөрөй торған комбайндар комбайнерҙары менән етерлек тиклем тәьмин ителмәгәндәр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ошо йылдың 15 июнендә комбайнер кадрҙары әҙерләү буйынса махсус ҡарар ҡабул итте. Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министерствоһының, республика игенселек һәм малсылыҡ совхоздары тресттарының, шулай уҡ күп кенә райондарҙа Совет һәм ауыл хужалығы органдарының комбайнерҙар кадрҙары әҙерләү мәсьәләһенә етерлек иғтибар бирмәүҙәрен билдәләп, Министрҙар Советы комбайнер кадрҙары әҙерләү буйынса конкрет саралар билдәләне. Был ҡарар нигеҙендә райондарҙа МТС-тарҙың һәм совхоздарҙың комбайнерҙар менән тәьмин ителеүҙәренең торошо тикшерелергә һәм яңы урожай йыйнауҙы башлағанға тиклем уларҙы комбайнерҙар менән тулыһынса тәьмин итеү саралары күрелергә тейеш.

Механизация мәктәптәрендә һәм МТС-тар һәм совхоздар эргәһендәге курстарҙа быйыл уҡыуҙарҙың сифатын күтәреүгә, практик күнекмәләрҙе ойоштороуға ныҡ иғтибар биреү талап ителә. Алдынғы механизаторҙарҙың эш тәжрибәләрен өйрәнеү һәм дөйөмләштереү уҡыуҙарҙа ҙур урын алып торорға тейеш. Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы комбайнеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Солонинден, былтырғы сезонда 8507 центнер ашлыҡ урып һуҡҡан Арслан Кирәев (Шишмә МТС-ы) 8385 центнер ашлыҡ урып һуғыуға өлгәшкән Евлампий Токарев (Шаран МТС-ы) һәм башҡа данлы комбайнерҙарҙың эш методтары бөтә йәш кадрҙарҙың достояниеһенә әйерелдерелергә тейеш. Комбайнерҙар социалистик ауыл хужалығының культураһын һәм етештереүсәнлеген артабан күтәреүҙә ҙур эш башҡарыусылар булып торалар һәм ауыл хужалығы механизаторҙарының алдынғы отрядын тәшкил итәләр. Йыл буйына тәрбиәләп үҫтергән урожайҙың яҙмышы, лаҙаҡ килеп, комбайнерға, уның үҙ эшенең оҫтаһы булыуына бәйләнгән. Партия һәм хөкүмәт шуға күрә комбайнерҙар тураһында ғәйәт ҙур хәстәрлек күрәләр һәм уларҙың эше юғары баһалана. Ошо көндәрҙә генә матбуғатта Шишмә МТС-ының комбайнеры Арслан Кирәевкә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы иғлан ителде.

Комбайнер — беҙҙең ауыл хужалығыбыҙҙа төп урожай йыйнау машинаһын йөрөтөүсе кадр ул. Комбайнерҙарҙың етерлек һанда һәм юғары квалификациялы булыуҙары баҫыуҙарыбыҙҙағы мул урожайҙы үҙ ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйнап алыуҙы тәьмин итәсәк. Комбайнерҙар, уларҙың ярҙамсылары, молотилка һәм башҡа ҡатмарлы машиналарҙың машинистары тураһында сталинса хәстәрлек күреү — бай урожайҙы үҙ ваҡытында йыйнап алыуға һәм государство алдындағы йөкләмәне срогында үтәүгә әҙерлек ул.

Комбайнерҙар әҙерләү партия һәм совет ойошмаларының бөгөнгө киҫектергеһеҙ бурысы. Был мөһим бурыс намыҫ менән үтәлергә тейеш.

Нефтсе техниктар әҙерләү

Нефть промышленносе министерствоһы быйыл урта квалификациялы нефтсе специалистар әҙерләүҙе артабан яҡшыртыу буйынса ҙур эштәр башҡара.

Техникумдарҙың уҡытыу-материаль базаһы киңәйтелә. Днауджикауҙа, Бакуҙа, Краснодарҙа, Саратовта, Иркутскиҙа һәм башҡа ҡалаларҙа техникумдарҙың яңы уҡыу корпустары һәм уҡыусылар өсөн дөйөм торлаҡтар төҙөлә.

Уҡыу кабинеттәре, лабораториялар һәм производство мастерскойҙары өсөн яңы оборудованиелар һатып алыуға өҫтәмә 2,5 миллион һум средство ассигновать ителде.

Быйыл көҙ Башҡорт АССР-ының Октябрьский ҡалаһында техникум асыла. Ул Туймазы нефть районының предприятиеләре өсөн техниктар әҙерләйәсәк.

(ТАСС).

Каховка гидроузелын төҙөүселәрҙең яңы ҡалаһы

Запорожье, 21 июнь. (ТАСС). Днепрҙың һул яҡ ярында Ключевой ауылы янында яңы ҡала төҙөлә. Унда Каховка гидроузелын төҙөүселәр йәшәйәсәктәр.

Быйыл гидроузелды төҙөүселәр 24 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны аласаҡтар.

(ТАСС).

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

☆☆

Район партия активе йыйылышы

Сәҡмәғош районының партия активе йыйылышы булып үтте. Йыйылышта «Районда яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, мал аҙығы әҙерләү, урожай йыйнауға әҙерлек һәм уны үткәреүҙә, ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары» тураһында райком секретары иптәш Ғәләүетдиновтың докладын тыңланды.

Район колхоздарының күпселеге яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа агротехник сроктарҙа уңышлы үткәрҙеләр.

«Бәрҙәштәр», «Красный Октябрь» һәм Роза Люксембург исемендәге колхоздар мал аҙығы әҙерләй башланылар.

Районда бесән сабыу машиналарының 37 проценте генә ремонтланған. Бесән сабыу, силос турау машиналары етешмәй. Колхоз председателдәре был машиналарҙы һатып алыу сараһын күрмәйҙәр.

Район партия ойошмаһының бөтә көсө быйылғы урожайҙы үҙ ваҡытында йыйнап алыуҙы һәм беренсе нәүбәттә иген тапшырыу буйынса государство алдындағы изге бурысты срогынан алда үтәүҙе тәьмин итеүгә йүнәлтелергә тейеш.

Бөртөклө ашлыҡ культураларының 44 процентын МТС-тар, ә 56 процентын колхоздар үҙҙәре йыйнап алырға тейеш. Ләкин ошо көнгә тиклем МТС-тар ҙа, колхоздар ҙа урғыс һәм молотилкаларҙы ремонтлау эшен ҡәнәғәтләнерлек ойоштормағандар. Район буйынса комбайндарҙың 61 проценте, молотилкаларҙың 50 проценте, урғыс машиналарҙың 60 проценте генә ремонтланған. «Тайнаш», «Йәштәр» һәм Куйбышев, Молотов исемендәге колхоздарҙа урожай йыйнауға әҙерләнеү эше айырыуса насар тора. Был колхоздарҙа бер генә машина ла, ябыҡ ырҙын табаҡтары һәм келәттәр ҙа ремонтланмаған.

Иптәш Ғәләүетдиновтың доклады буйынса фекер алышыуҙа сығып һөйләүсе коммунистар тағы ла күп кенә етешһеҙлектәрҙе астылар һәм райком работниктарының, артта ҡалған колхоз партия ойошмалары секретарҙарының һәм колхоз етәкселәренең эшендәге етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләнеләр.

Йыйылыш сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, мал аҙығы әҙерләү һәм урожай йыйнауға әҙерләнеү эшен яҡшыртыу өсөн конкрет саралар билдәләгән ҡарар ҡабул итте.

Х. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Беҙ тыныслыҡ өсөн эшләйбеҙ

Мин — бораулаусы. Иптәш Алексеев бригадаһында вахта менән етәкселек итәм. Беҙ, бораулаусылар, тыныслыҡты артабан нығытыу өсөн сығарыла торған нефткә юл асабыҙ. Беҙ сығарған нефть һуғыш уты тоҡандырыу өсөн түгел, ә коммунизмдың бөйөк төҙөлештәренә йөк ташыусы автомашиналар, колхоз ҡырҙарында эшләүсе тракторҙар өсөн кәтә.

Бына шуға күрә лә, беҙ проходка биреү темпын көндән-көн күтәрә барабыҙ. Бораулау мастеры иптәш Алексеев етәкселек иткән беҙҙең бригада 285 номерлы скважинаны бораулауҙа станок-айға 1002 метр проходка бирҙе.

Беҙ тыныслыҡ яҡлы, тыныслыҡ өсөн көрәшәбеҙ. Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға ун йыл тулды. Беҙ, совет нефтселәре, тағы ла, бындай дәһшәтле һуғыштың булмауын талап итәбеҙ һәм уны булдырмау өсөн киләсәктә тағы ла яҡшыраҡ эшләрбеҙ.

Л. Кузнецов,
«Туймазыбурнефть» тресы беренсе номерлы бораулау контораһы бораулаусыһы.

Беҙҙең хеҙмәт вкладыбыҙ

Учалы. (Телефон аша). 1941 — 1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында мин танкист булып ҡатнаштым һәм үҙ машинам менән Волганан алып Берлинға тиклем оҙаҡ юлды үттем.

Фашистик Германияға ҡаршы һуғыштарҙа яулап алынған тыныслыҡты ныҡытыу юлында мин бөгөн дә ижади хеҙмәттә, трактор руленда эшләйем. Беҙҙең трактор бригадаһы «Совет» колхозын хеҙмәтләндерә. Мин инде алтынсы йыл бригадаға етәкселек итәм.

Беҙҙең бригада колхоздың һуғыш йылдарында ныҡ ҡаҡшаған экономикаһын аяҡҡа баҫтырыуҙа уңышлы эшләй. «Совет» колхозы йыл һайын юғары урожай ала, государство алдындағы йөкләмәне срогында үтәй.

Трактор бригадаһы быйыл яҙғы сәсеүҙе һәм пар һөрөүҙе агротехник сроктарҙа һәм яҡшы сифатлы итеп үткәрҙе. Сәсеүлектәрҙән мул урожай көтөлә. Урожай йыйнауға әҙерлек яҡшы тамамланды.

Беҙ, механизаторҙар, үҙебеҙҙең хеҙмәтебеҙ менән тыныслыҡ өсөн көрәшкә вклад индерәбеҙ. Тыныслыҡ фронтын нығытыуҙа беҙ киләсәктә лә яҡшы эшләргә һүҙ бирәбеҙ.

Алтын Дәүләтбаев,
Учалы МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры.

МТС урожай йыйнауға әҙерлекте тамамланы

Йәркәй МТС-ы комбайндарҙы ремонтлау эшен срогынан алда тамамланы. Ремонттан сыҡҡан 36 комбайн хәҙер колхоздарға ебәрелде.

Машина-трактор станцияһы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа быйыл 52 комбайн эшләйәсәк. Уларҙың 16-һы үҙе йөрөй торған комбайн. Комбайндар менән урожай йыйнау күләме быйыл, үткән йылға ҡарағанда, 5 мең гектарға арта.

Ремонт эштәрен башҡарыуҙа комбайнер Ғарифуллин һәм Насибуллин иптәштәрен ремонт бригадалары алдынғылыҡты яулап алдылар.

Йәркәй МТС-ы комбайнерҙары урожай йыйнауҙы ҡыҫҡа срокта, юғалтыуһыҙ үткәреү өсөн социалистик йөкләмә алдылар. Быйыл комбайндар тәүлеккә 18—20 сәғәт эшләйәсәк, урожай йыйнау планы 25 көндә үтәләсәк.

Үҙған йылда «Сталинец—1» комбайны менән 900 гектар ашлыҡ урған комбайнер иптәш Ғарифуллин быйыл мең гектар майҙандың урожайын йыйнарға һүҙ бирҙе. Комбайнер иптәш Насибуллин 900 гектар ерҙең урожайын йыйнарға йөкләмә алды.

З. Ишбулатов.

Ҡышҡа әҙерләнәләр

«Туймазынефть» тресының контуралап һыу ебәреү контораһы коллективы, үҙған йылда ҡышҡа әҙерлекте ваҡытында тамамлағайны. Һөҙөмтәлә коллектив ҡышҡы айҙарҙа ла уңышлы эшләүен дауам итте.

Быйыл да контуралап һыу ебәреү контораһы ҡышҡа әҙерлекте май айында уҡ йәйеп ебәрҙе.

Иптәш Рәхимғолов етәкселек иткән үҙләштереү цехы эшселәре культбудкаларға ремонт үткәрҙеләр. Иптәш Ғабдрахманов бригадаһы йылытыу ҡаҙандарын ремонтлау эшен ҡыҙыу темп менән алып бара. Водоводтар цехы коллективы магистраль ҡоҙоҡтарҙың 60 процентын ремонтланы. Һыу ҡыуыу скважиналарының 85 проценте ҡышҡы шарттарҙа туҡтауһыҙ эшләрлек итеп ремонтланды ла инде.

Бораулаусылар ҡышҡа әҙерләнә башланылар. Ҡыш борауларға билдәләнгән 15 скважинаға 15 километр оҙонлоғонда пар водопроводы үткәрелде. Изоляция эштәре башҡарылды. Бер котельный төҙөлеп бөттө. Ике котельнийҙы монтажлау эше тамамланыу алдында тора. Балсыҡ һәм материалдар ташыу башланды.

И. Егоров.

ПАР ЕРҘӘРЕ ЭШКӘРТЕЛӘ

Мичурин исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе Иглин МТС-ының иптәш Михаил Рябов етәкселек иткән трактор бригадаһы сәғәт графигы менән эшләй. Ул яҙғы эштәр планын МТС-та беренсе булып үтәне. Пар һөрөүҙе лә май айында уҡ тамамланы. Шулай уҡ пар майҙанында культивация яһалды.

Был МТС-тың Дмитриев, Никифоров иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадалары «Красный колос» һәм Киров исемендәге колхоздарҙа пар ерҙәрен культивациялайҙар.

Ғ. Ғәйнуллин.

ЯҢЫ ТӨҘӨЛӨШТӘР

Туймазы районы Ғафури исемендәге колхозда яңы быуа төҙөү эше тамамланды. Быуаның тәрәнлеге 8, оҙонлоғо 120, киңлеге 20 метр.

Уны төҙөүҙә 70 кеше, трактор һәм аттар көсө файҙаланылды. Быуаны төҙөүгә колхоз 35 мең һум аҡса тотто.

Хәҙер 80 ат һыйҙырышлы таштан һарай һалына башланы.

Быйыл 150 баш һыйыр һыйҙырышлы торлаҡ һалынасаҡ.

Ф. Миңлекәева.

☆☆

Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Арслан Кирәев.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Урожайҙы йыйнап алыуҙы тиҙ һәм юғалтыуһыҙ үткәрәйек!

Шишмә МТС-ы комбайнеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Арслан Кирәевтең республика МТС-тарының һәм совхоздарының бөтә комбайнерҙарына

ХАТЫ

Иң ҡыҙыу һәм яуаплы эш осоро — урожай йыйнау һәм государствоға иген тапшырыу ваҡыты яҡынлаша. Социалистик ярышта алған йөкләмәләребеҙҙе үтәү өсөн көрәштең уңышы тап ошо көндәрҙә хәл ителәсәк.

Колхоздарҙы эреләтеү, Совет государствоһының беҙҙең ауыл хужалығын бай ҡоралландырған, гүзәл техникаһын тағы ла етештереүсәнлерәк файҙаланыу өсөн ҙур мөмкинлектәр асты.

Урожайҙы үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп йыйнап алыуҙы үткәреүҙә комбайнерҙың роле бик ҙур. Комбайнда хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙең сикләнмәгән резервтары бар. Һөйөклө Ватаныбыҙҙы тағы ла күберәк ныҡытыу өсөн был резервтарҙы табыу һәм файҙаланыу—беҙҙең һәр беребеҙҙең почетлы бурысыбыҙ.

1950 йылда мин Шишмә районы Ленин исемендәге колхозда «Сталинец—1» комбайнында эшләнем. Беҙҙең агрегат 35 эш көнөндә урылған майҙандан 8441 центнер бөртөклө ашлыҡ культуралары һәм 66 центнер үлән орлоғо һуғып алды. Урожай йыйналған бөтә баҫыуҙар колхоз тарафынан отличнө һәм яҡшы билдәләрә менән ҡабул ителде.

Миңә Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреп, хөкүмәт ҙур хөрмәт күрһәтте. Был юғары награда мине һәм минең иптәштәремде һөйөклө Ватаныбыҙҙың данлы хаҡына хеҙмәттә тағы ла батырыраҡ эшләүгә рухландыра.

Мин быйыл шул уҡ колхозда, Миңнеәхмәт Байбурин етәкселек иткән трактор бригадаһы менән дуҫлыҡта урожай йыйнаясаҡмын. Урожайҙың күренеше яҡшы. Арыштың һәр бер гектарынан кәмендә 19—20 центнер, яҙғы бойҙайҙың һәр гектарынан кәмендә 20 — 22 центнер урожай йыйнарбыҙ. Миңә беркетелгән, бығаса унда 6 йыл буйына эшләгән комбайн урожай йыйнау эштәренә тулыһынса әҙер.

Комбайн орлоҡ тоткостар һәм электр яҡтылығы менән йыһазландырылған. Йығылған ашлыҡтарҙы йыйнау өсөн ҡулайлама булдырылған. Янғынға ҡаршы инвентарҙар ҙа бар.

Трактор бригадаһы бригадиры иптәш Байбурин яҡшы ремонтланған «СТЗ — НАТИ» тракторын бирә. Унда тәжрибәле трактористарҙан Зиннур Осалуллин һәм Хәжи Осалуллин иптәштәр эшләйәсәк. Агрегатты хеҙмәтләндереү өсөн колхоз иң яҡшы колхозсыларҙы һәм игенде ырҙынға ташыу өсөн 12 бричка беркетә.

Үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе иҫәпкә алып һәм бөтә донъяла бөйөк тыныслыҡ өсөн көрәш эшенә үҙебеҙҙең хеҙмәтебеҙҙе һалыу теләге менән рухланып, беҙҙең агрегат коллективы 1951 йылда 35 эш көнөндә 800 гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ урожайы йыйнарға һәм кәмендә 15 мең центнер иген һуғып алырға социалистик йөкләмә алды. Ошо уҡ срокта беҙ 200 гектар майҙанда үлән орлоҡсолоғо участкаһы урожайын йыйнаясаҡбыҙ.

Беҙ һәр бер 11 көндең береһендә экономиялаған яғыулыҡ иҫәбенә эшләйәсәкбеҙ. Беҙ комбайнды социалистик һаҡлыҡҡа алдыҡ һәм урожай йыйнауҙы тамамлау менән уны кәрәкле ремонттан үткәрәсәкбеҙ һәм төҙәк хәлендә ҡышҡы һаҡлауға ҡуясаҡбыҙ.

1951 йылдың урожайын йыйнау осоронда мин комбайн менән урожай йыйнау буйынса бер мастер әҙерләргә, уға үҙемдең эш тәжрибәләремде бирергә йөкләмә алам.

Үҙебеҙгә алған йөкләмәне үтәү өсөн беҙ быйыл да, былтырғы кеүек уҡ, сәғәт графигы буйынса эшләйәсәкбеҙ һәм комбайндың көндәлек эшләп сығарыуын 40—45 гектарға тиклем еткерәсәкбеҙ. Комбайн һәм тракторҙы үҙ ваҡытында һәм ентекле техник тәрбиәләүҙе тәьмин итәсәкбеҙ.

Агрегат работниктары араһында, иген ташыусыларҙы ла индереп, агрегатты техник хеҙмәтләндереү буйынса — уның бөтә частарын һәм механизмдарын таҙартыу, майлау һәм регулировать итеү буйынса эштәр бүленеп ҡуйылған.

Комбайндың етештереүсәнлеген күтәреү өсөн баҫыуҙарҙы урожай йыйнауға әҙерләү ҙур әһәмиәт тота. Мин ашлыҡтарҙың өлгәреүҙәрен даими күҙәтеп барам һәм инде загондар бүлеүҙе лә иҫәпләп ҡуйҙым. Комбайн хедерҙең тулы алымында эшләйәсәк. Иген массаһының йыйылыуын, хедер алымы киңлегенең үҙгәреүе менән түгел, бәлки комбайн хәрәкәтенең тиҙлеге менән регулировать итәсәкмен. Комбайн бункерынан игенде бушатыуҙы беҙ тик эш барышында ғына үткәрәсәкбеҙ.

Мин Башҡорт АССР-ы МТС-тарының һәм совхоздарының бөтә комбайнерҙарын, бөтә механизаторҙарҙы комбайн менән урожай йыйнауҙа резервтарҙы тулы файҙаланыу өсөн һәм ашлыҡтарҙы йыйнап алыуҙы ҡыҫҡа срокта һәм юғалтыуһыҙ үткәреү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылырға саҡырам.

Арслан Кирәев,
Социалистик Хеҙмәт Геройы, Шишмә МТС-ы комбайнеры.

Хужалыҡ төҙәлешенә большевистик етәкселек программаһы

(И. В. Сталиндең „Яңы обстановка—хужалыҡ төҙәлешенең яңы бурыстары" тураһында хужалыҡ работниктары кәңәшмәһендә һөйләгән телмәренә 20 йыл тулыуға ҡарата)

Иптәш Сталиндең «Яңы обстановка — хужалыҡ төҙәлешенең яңы бурыстары» тураһында 1931 йылдың 23 июнендә хужалыҡ работниктары кәңәшмәһендә һөйләгән телмәре халыҡ хужалығын социалистик индустриялаштырыу һәм ауыл хужалығын коллективлаштырыу уңышлы үткәреүҙең киң программаһы булды. Ул — марксистик-ленинсы фәнгә ҙур өлөш индереү булды. Иптәш Сталин унда социализм политик экономияһының мөһим проблемаларын эшкәртте, хужалыҡ төҙәлешендә етәкселек итеүҙең большевистик принциптарын эшләне. И. В. Сталиндең гениаль күрһәтмәләре социализмдан аҡрынлап коммунизмға күсеүҙең хәҙерге, ауыр һәм ҙур бурыстарын хәл итеүҙә лә ҙур әһәмиәткә эйә. Улар беҙҙе яңы шарттарҙа эшләргә өйрәтә, иҡтисади үҫеште тиҙләтергә ярҙам итә.

Иптәш Сталин, быны үтәү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар, тип билдәләне. Был телмәрҙә совет хужалығының яңы шарттарҙа үҫеүенең мөһим шарттары асып бирелде.

Иптәш Сталиндең промышленностағы кәңәшмәлә һөйләгән телмәре хужалыҡ етәкселәренә, большевиктарға эшкә булған ҡарашты күрһәтте. Ул эшсе кадрҙарҙың, техниканың ролен асып бирҙе.

Иптәш Сталин промышленностағы эш көсөн ойоштороу мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирҙе. Колхоздарҙың үҫеүе, ауылдарҙа ярлылыҡтың бөтөүе арҡаһында эшселәр ҡаланан китмәй башланы. Капиталистик илдәрҙә эшһеҙлек хөкөм һөргән бер ваҡытта беҙҙә эшһеҙлек юҡ ителде.

Совет хөкүмәте социалистик промышленность өсөн кадрҙар әҙерләүҙе ойошторҙо, эшселәрҙе производствола квалификациялы итеп тәрбиәләү эшен киң йәйелдерҙе.

Был өсөн совет төҙөлөшө шарттарына ярашлы эш хаҡын ойоштороу, эшселәрҙе производствола нығытыу, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу бурыстары ҡуйылды. Ҙур тармаҡтарҙа механизациялаштырыу, сәнәғәттә хеҙмәтте еңеләйтеү өсөн бөтә саралар күрелде.

Мәҫәлән, бишйыллыҡ осоронда промышленность һәм транспорт өсөн квалификациялы эшселәр һәм белгестәр әҙерләнде. Бишйыллыҡ аҙағына индустриализация, 5.4 миллион эшсе һәм служащий; 2. Ауыл хужалығы өсөн 2,3 миллион тракторсы, комбайнер һәм башҡа механизаторҙар әҙерләнде. 3. Туранан-тура производствола 13.9 миллион эшсе квалификацияһын күтәрҙе. Государство хеҙмәт резервтары производство өсөн квалификациялы һәм массовый кадрҙарҙы тулыландырыуҙың төп сығанағы булып тора. Был осорҙа ул хужалыҡтарға 4.5 миллион йәш эшсе әҙерләп бирҙе. СССР-ҙа эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең һаны 1950 йылда 39,2 миллион кешегә етте. Был, 1940 йылдағы ҡарағанда, 7.7 миллионға күберәк.

Иптәш Сталин хеҙмәт процестарын механизациялаштырыу әһәмиәтенә ныҡ иғтибар бирҙе, сөнки был промышленность өсөн эшсе ҡулдарына ихтыяжды кәметә, эшселәрҙең хеҙмәтен еңеләйтә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрә. Беҙҙең техниктарыбыҙ һәм инженерҙарыбыҙ промышленностың механизациялаштырыу буйынса бөйөк уңыштарға өлгәштеләр. Шулай уҡ ауыл хужалығында ла механизация юғары үҫеш алды.

Иптәш Сталиндең был телмәрендә совет кешеләренең эшкә булған ҡарашы үҙгәреүе, хеҙмәттең данлы эшкә әйләнеүе күрһәтелде. Мәҫәлән, күмер промышленностында ҡулдан эшләнгән эштәр механизацияланды. Иң ауыр эштәр механизация ярҙамында башҡарыла. Шулай уҡ транспорт, төҙөлөш һәм башҡа тармаҡтарҙа ла механизация киң ҡулланыла.

Беҙҙең республикабыҙҙа ла, Башҡортостанда промышленность һәм ауыл хужалығын механизациялаштырыуҙа ҙур уңыштарға өлгәшелде. Туймазы, Ишембай нефть промыслалары, Өфөнөң ҙур заводтары, Тубыл, Кумертау, Баймаҡ һәм Һалауат ҡалалары, Туймазынан Өфөгә, Ишембайҙан Өфөгә нефть үткәргестәре, эре индустриаль предприятиелар илебеҙ индустрияһына ҙур өлөш индерә.

Иптәш Сталин телмәрендә промышленностың үҫеше менән бергә эш хаҡын дөрөҫ ойоштороуҙың әһәмиәтен күрһәтте.

Совет кешеләренең матди хәле йылдан-йыл яҡшыра бара. Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү хеҙмәт хаҡын арттырыу өсөн нигеҙ булып тора. Беҙҙең хужалыҡтарҙа эшкә ҡарата коммунистик ҡараш тәрбиәләнә.

Иптәш Сталин «Яңы обстановка — хужалыҡ төҙәлешенең яңы бурыстары» тигән телмәрендә хеҙмәттең эшселәрҙе бөтә кәмселектәрҙе бөтөрөүгә, сифатлы продукция етештереүгә ҡарата яңы талаптар ҡуйҙы.

Тиҙ арала ҙур уңыштарға өлгәшеү, хужалыҡ үҫешенә яңы көс индереү өсөн иптәш Сталин хеҙмәт етештереүсәнлеген үҫтереүҙе талап итте. Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, эшселәрҙең квалификацияһын күтәреү мәсьәләһен бик ныҡ ҡуйҙы. Хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күрешен систематик күтәреү социалистик экономиканың үҫешенең законы булып тора. Кешеләр тураһында хәстәрлек күреү, уларҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә иғтибарлы булыу социалистик төҙөлөштөң асылынан килеп сыға.

Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу социалистик экономиканы үҫтереүҙең мөһим шарттарынан береһе булып тора. Иптәш Сталин, әйләнеүселәрҙе «тапшырылған эш өсөн бер нисәләй ҙә яуаплылыҡтың юҡлығы, механизмдар өсөн, станоктар өсөн, инструменттар өсөн яуаплылыҡтың юҡлығы ул» тип характерлап, әйләнеүселәрҙе бөтөрөү, хеҙмәтте ойоштороуҙы яҡшыртыу, предприятиеларҙа эшсе көстө дөрөҫ урынлаштырыу бурысын ҡуйҙы.

Иптәш Сталин «Яңы обстановка—хужалыҡ төҙәлешенең яңы бурыстары» тигән телмәрендә совет производство-техник интеллигенцияһын булдырыуҙың киң программаһын билдәләне. Ул былай тине: «Беҙгә шундай команда кешеләре һәм инженер-техник кешеләр кәрәк: улар илебеҙҙәге эшселәр синыфының политикаһын аңлауға булдыҡлы булһындар, был политиканы үҙләштереүгә булдыҡлы булһындар һәм уны намыҫ менән тормошҡа ашырырға әҙер булһындар. Ә был ни тигән һүҙ? Был, беҙҙең илебеҙ үҫештең шундай фазаһына инде, был фазала **эшселәр синыфы үҙенә** производствола эшселәр синыфының интерестарын хакимлек итеүсе синыф интерестәре итеп яҡлап барыуға булдыҡлы булған **үҙ производство-техника интеллигенцияһын булдырырға тейеш,** тигән һүҙ».

Беҙҙең большевиктар партияһы һәм Совет государствоһы был бурысты яҡшы үтәнеләр. Хәҙер беҙҙең яңы совет интеллигенцияһы бар. Был — һәр төрлө эксплуатациянан азат ителгән халыҡ өсөн эшләүсе яңы типтағы интеллигенция. Кешелек тарихе бындай интеллигенцияны белмәй ине әле. Совет интеллигенцияһы эшселәрҙән, крәҫтиәндәрҙән һәм хеҙмәтсәндәрҙең башҡа ҡатламдары араһынан сығып формалашты. Совет власы мәлендә 10 миллиондан артыҡ кеше урта һәм юғары белем алды. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда СССР-ҙың халыҡ хужалығы юғары белемле 662 мең специалист һәм урта белемле 1.278 мең специалист алды. Биш йыллыҡ эсендә ғилми-тикшеренеү учреждениеларындағы ғилми работниктарҙың һаны ике тапҡыр самаһы артты. Үҙенең интеллигенцияһын булдырыуҙа Башҡортостан республикаһы гүзәл уңыштарға өлгәште. Беҙҙең республикала 8 ғилми-тикшеренеү институттары һәм тәжрибә станциялары бар. СССР Фәндәр Академияһының филиалын ойоштороу республикабыҙ тормошонда ҙур ваҡиға булып тора.

Совет интеллигенцияһы илебеҙҙә социалистик общество төҙөү эшенә, илдең обороналы һәләтлеген көсәйтеүгә ғәйәт ҙур вклад индерҙе. Совет интеллигенцияһы Тыуған илгә тоғро хеҙмәт итә. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта атом энергияһының серенә төшөнөү совет фәненең ҙур уңышы тураһында һөйләй. Был, совет фәне иптәш Сталин тарафынан ҡуйылған бурысты — сит илдәрҙәге фән ҡаҙаныштарын уҙып китеү бурысын уңышлы хәл итә, тигән һүҙ.

Иптәш Сталин «Яңы обстановка—хужалыҡ төҙәлешенең яңы бурыстары» тигән телмәрендә иҫке мәктәп инженер-техник кешеләренә мөнәсәбәтте үҙгәртеүҙе, уларға ҡарата күберәк хәстәрлек һәм иғтибар күрһәтеүҙе, уларҙы эшкә ҡыйыуыраҡ ылыҡтырыуҙы талап итте. Иптәш Сталиндең был күрһәтмәһе үтәлде.

Иптәш Сталин үҙенең телмәрендә хужалыҡ иҫәбен социалистик предприятиеларға дөрөҫ етәкселек итеүҙең мөһим шарттарынан береһе итеп ҡуйҙы. Иптәш Сталин хужалыҡ иҫәбен идара итеүҙең пландарҙы үтәүҙе, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙе һәм социалистик накопление сығанаҡтарын арттырыуҙы тәьмин итеүсе методы итеп ҡараны. СССР халыҡ хужалығын социалистик реконструкциялауҙың беренсе осоронда хужалыҡ төҙөлөшө ихтыяждары өсөн миллиардлаған һумдар еңел промышленностан, ауыл хужалығынан, бюджет туплаңмаларынан алынды. Ләкин реконструкциялауҙың күләме үҫеү менән мая туплауҙың был сығанаҡтары ғына етешмәй башланы. Беренсе сталинсе биш йыллыҡ осоронда иҫке промышленносте реконструкциялауҙан техник яҡтан ҡоралланған яңы промышленносте булдырыуға, яңы ҡеүәтле индустриаль районлдарҙы булдырыуға, тимер юл төҙөлөшөн киң йәйелдереүгә күсеү талап ителде. Был ғәйәплоз бурыстарҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн мая туплауҙың иҫке сығанаҡтарын көсәйтә барып, ауыр промышленностан, бөтәһенән дә элек, машиналар төҙөлөшөнән накопление биреүенә өлгәшергә кәрәк ине.

Хәҙер хужалыҡ иҫәбен индереү, ныҡлы экономия режимен үткәреү мәсьәләләренең әһәмиәте арта бара. Хужалыҡ иҫәбе производство командирҙарының, инженер-техник работниктарҙың һәм бөтә эшселәрҙең инициативаһын бөтә яҡлап үҫтереүҙе күҙҙә тота. Учреждениеларҙың һәм предприятиеларҙың етәкселәре производство методтарын яҡшыртыу эшендә общественный инициативаны бөтә яҡлап дәртләндерергә тейештәр.

Иптәш Сталин үҙенең телмәрендә хужалыҡ етәкселегенең эш стиле нисек булырға тейешлеген күрһәтте. Иптәш Сталиндең был күрһәтмәһе хәҙер ҙә бик әһәмиәтле. Иптәш Сталин предприятие етәкселегенең оператив һәм конкрет булыуын, хужалыҡ етәкселәренең техниканы тәрән белеүҙәрен, эштең деталенә инеүҙәрен талап итте. Хәҙер заводтарҙан алыҫта конторала ултырып, канцеляриянан етәкселек итеү мөмкин тип уйлау, — аҙашыу тигән һүҙ. Заводтарға етәкселек итеү өсөн, предприятиеларҙың работниктәре менән йышыраҡ аралашырға кәрәк, улар менән йәнле бәйләнеш торорға кәрәк.

Беҙҙең илебеҙҙә хужалыҡ етәксеһе — халыҡ хеҙмәтсеһе ул. Совет кешеләренең үҫә барған ихтыяждарын яҡшыраҡ ҡәнәғәтләндереү өсөн мөмкин булған бөтә нәмәне эшләү — уның маҡтаулы бурысы. Һәр бер хужалыҡ етәксеһе иптәш Сталиндең түбәндәге һүҙҙәрен хәтерҙә тоторға тейеш: «Беҙҙең шарттарҙа хужалыҡ етәксеһе булыу — ул бөйөк хөрмәткә һәм бөйөк почетҡа лайыҡлы булыу, эшселәр синыфының, халыҡтың бөйөк ышанысына лайыҡлы булыу, тигән һүҙ».

Иптәш Сталин «Яңы обстановка—хужалыҡ төҙәлешенең яңы бурыстары» тигән телмәрендә «партия тирәһендә уралыусы обывателдәрҙән» ныҡ көлдө. Улар беҙҙең пландарыбыҙҙың реаль түгеллеге тураһында лығырҙанылар. Производство планы, тине иптәш Сталин, цифрҙар һәм заданиелар теҙмәһенә ҡайтып ҡала, тип уйлау әлйотлоҡ булыр ине. Ысынлап та, производство планы миллионлаған кешеләрҙең йәнле һәм практик эшмәкәрлеге ул. Беҙҙең производство планыбыҙҙың реаллеге — яңы тормош төҙөүсе миллионлаған хеҙмәтсәндәр, беҙҙең яңыса эшләргә әҙер булыуыбыҙ, планды үтәүгә беҙҙең бәйнәтлығыбыҙ ул. Социалистик ярыштың бөтә барышы был сталинсе положениеларҙың дөрөҫлөгөн тулыһынса раҫланы.

Беҙҙең халҡыбыҙ 1946 йылдың 9 февралендә һөйләгән телмәрендә иптәш Сталин тарафынан билдәләнгән коммунизм төҙөү программаһын үтәү өсөн бөтә көсөн һала. Был программаны үтәү — беҙ шундай гүзәл экономик хәрби ҡеүәтте булдырырбыҙ, ул саҡта илебеҙ теләһә ниндәй осраҡлы хәлдәрҙән гарантияланған буласаҡ, шуның менән бергә, социализмдан коммунизмға күсеү өсөн бөтә шарттар әҙерләнәсәк, тигән һүҙ.

Иптәш Сталиндең был телмәренең халыҡ-ара әһәмиәте бик ҙур. Халыҡ демократияһы илдәре үҙҙәренең социализм өсөн көрәштәрендә был хеҙмәттән социалистик төҙөлештең ҡатмарлы мәсьәләләрен хәл итеүгә өйрәнәләр.

Иптәш Сталиндең «Яңы обстановка — хужалыҡ төҙәлешенең яңы бурыстары» тигән гениаль фәнни хеҙмәте коммунистик төҙөлештең бөйөк пландарын уңышлы үтәү өсөн көрәштә беҙҙең партиябыҙҙың, беҙҙең государствобыҙҙың ҡеүәтле ҡоралы булып хеҙмәт итә.

Б. Шнеер,

Политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының действительный члены.

Тиҙ һәм юғары сифатлы ремонтлау өсөн

Трактор-подъемниктарҙы ремонтлаусы слесарҙар өҫтөнә ҙур яуаплылыҡ төшә. Улар ер аҫты ремонтсылары бригадаларының буш тороуҙарын булдырмау өсөн трактор-подъемниктарҙы тиҙ һәм юғары сифатлы итеп ремонтларға тейештәр. Сөнки нефть сығарыусыларҙың да, ер аҫты ремонтсыларының да эше беҙҙең эш менән ныҡ бәйләнгән.

Подъемниктең фракцион барабанын һүтеп алыу һәм ремонтлау операцияһын башҡарыуҙа беҙ слесарь иптәш Вагнерҙең эш алымын файҙаланып эшләйбеҙ. Элек был операцияны башҡарыу өсөн подъемник өҫтөнән 3 тонналы лебедка алып ҡуйыла ине. Хәҙер лебедканы алып тормайбыҙ, шунлыҡтан ремонтта тороу ваҡыты ике ярым тапҡырға ҡыҫҡарҙы.

Мин индергән тәҡдим буйынса «С—80» маркалы тракторҙарҙың головкаларындағы иҫке прокладкаларҙы хәҙер моторҙың һауа һурғысы һәм уны тышҡа сығарып тороусы торбаларҙа файҙаланабыҙ.

Бөтә был эш алымдары слесарҙар араһында киң таралды.

И. Гаврилов,

«Ишембайнефть» тресының тракторҙар контораһы слесаре.

Файҙалы эш алымы

Өфө паровоздар ремонтлау заводында иптәш Власенко етәкселек иткән тендер цехы коллективы — иң алдынғыларҙың береһе. Ул үҙенең ҡулында оҙаҡ ваҡыттар буйы заводтың күсмә Ҡыҙыл Байрағын тотоп килә.

Тәгәрмәстәр цехы коллективы тендер цехына продукцияны үҙ ваҡытында бирмәйенсә оҙағыраҡ тотһа, тендер цехы эшселәре, тәгәрмәстәр цехына килеп, тәгәрмәстәрҙең шейкаларын үлсәп алалар һәм уларға подшипниктар һәм башҡа деталдәрҙе алдан уҡ әҙерләп торалар. Был һуңынан тәгәрмәстәрҙе тиҙ генә йыйыу өсөн ярҙам итә. Һөҙөмтәлә продукцияның етештерелеү процесында булыуы байтаҡ ҡыҫҡара. Шулай уҡ механика цехының да, букстар әҙерләгәндә, продукцияны ваҡытында бирмәү фактары була. Был осраҡта ла тендер цехы эшселәре етешмәгән деталдәрҙе көтөп ултырмайҙар. Кәрәкле деталдәрҙе алдан уҡ үҙҙәрендә әҙерләй торалар.

Бындай эш алымын ҡулланыу коллектив өсөн бик файҙалы. Цех коллективы элек артта ҡалып килһә, хәҙер ул алдынғылар сафында бара.

С. Әзмәтов,

Өфө паровоздар ремонтлау заводының тәгәрмәстәр цехы контроль инспекторы.

Завод алдынғылары

Өфө телефон аппараттары заводының коллективы бирелгән заданиены срогынан алда арттырып үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерҙе. Ярышта 7-се номерлы йыйнау цехы алдынғылыҡты алды. Бында мастерҙарҙан Желунипын, Чернышев, Сатаев иптәштәр етәкселек иткән сменалар хеҙмәттә юғары күрһәткестәргә өлгәштеләр.

Бригадирҙары Тихонов һәм Ефименко булған бригада членлары Ғәммәнова, Шәһивәлиева, Данилов, Сәхибгәрәев, Бадретдинов, Зәбәйҙуллин, Андреева һәм башҡа иптәштәр көндәлек нормаларын 200—250 процентҡа үтәйҙәр. Михеев һәм Рябов иптәштәр производство нормаларын 350—400 процентҡа үтәп, завод коллективы араһында ҙур авторитет ҡаҙанды лар.

Ә. Сәйфетдинов.

Стена газеталарының эш тәжрибәләренән

Юғары урожай алыу өсөн көрәштә стена газетаһы

Стена газетаһы тиһегеҙме? Ул—большевистик матбуғаттың бер төрө. Халыҡ хужалығында стена газетаһы ғәйәт ҙур роль уйнай. Ул коллектив пропагандисты ла, агитатор ҙа һәм ойоштороусы ла. Был темаға күп һөйләп тороуҙың кәрәге юҡ. Сөнки был турала һәр кем белә. Шулай ҙа Арҡауыл МТС-ы ерҙәһендә сығарылған «Тракторист» стена газетаһы тураһында һөйләү артыҡ булмаҫ.

— ...Комбайндар ремонтлау эше өҙөклектә тора. Ремонт өсөн материалдар һәм запас частәр юҡ. Үҙемә бирелгән производство планын срогынан алда үтәп сығыу өсөн минең бөтә мөмкинлектәрем бар. Тик шуныһы: ағас материалдары етешмәү арҡаһында, эшемдә тотҡарлыҡ яһала...

Комбайнер Сәхәүетдинов етешһеҙлектәр, бигерәк тә етәксе работниктарҙың үҙ бурыстарын үтәүгә әле тулыһынса әһәмиәт бирепе еткермәүҙәре тураһында әйтте һәм уларҙы ҡаты тәнҡитләне. Унан һуң Ғәзимуллин, комбайнер Храмых һәм башҡа бик күп иптәштәр һөйләнеләр.

Салауат районының Арҡауыл МТС-ында сыға торған «Тракторист» стена газетаһының 4-се номерендә комбайндарҙы ремонтлауҙың өҙөклектә булыуы тураһында иптәш Ғәзимуллиндең баҫылып сыҡҡан мәҡәләһен тикшереү буйынса йыйылған профсоюз йыйылышы ине был. Мәҡәләлә комбайндарҙы ремонтлауҙың барышына тулы анализ яһалып, завхоз иптәш Шишкиндең комбайндар өсөн ағас материалдары булдырыу тураһында ғәмһеҙлеге асып һалынғайны. Мәҡәлә йыйылышта тикшерелеп, унда күрһәтелгән фактар дөрөҫ, тип табылдылар. Завхоз иптәш Шишкин үҙенең ғәҙел тәнҡиткә алыныуын ҡабул итте һәм бөтә етешһеҙлектәрҙе тиҙ көндә бөтөрөү тураһында коллектив алдында һүҙ бирҙе.

Профсоюз йыйылышы 2-3 көн эсендә эштә боролош яһарға, комбайндарҙы ремонтлауҙы тейешле юғарылыҡҡа күтәрергә һәм быйылғы урожай йыйнау кампанияһын тулы әҙерлек менән ҡаршыларға ҡарар итте. Комбайнерҙар социалистик ярыш йәйелдерергә һүҙ бирҙеләр һәм күтәренке йөкләмәләр алдылар.

Һүҙ эштән айырылманы. Йыйылыштан һуң МТС-та комбайндарға мотовилолар етештереү өсөн таҡта ярыу эше ойошторолдо һәм бер балта оҫтаһы билдәләнде. Бөтә комбайнерҙар ҙа ҙур хеҙмәт күтәрелеше шарттарында эшләй башланылар. Социалистик ярыш байрағы тағы ла юғарыраҡ күтәрелде. Һөҙөмтәлә биш көн эсендә генә 6 комбайн ремонттан сыҡты. Хеҙмәт етештереүсәнлеге 1.5 тапҡырға артты. Шулай итеп, стена газетаһының 4-се номерендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләне тикшереү һәм тейешле саралар күреү эштә ҙур уңышлыҡтарға өлгәшергә мөмкинлек бирҙе. Был әле «Тракторист» стена газетаһының тәүге фактарының береһе генә түгел, бындайҙар күп.

Бына икенсе фактты ғына алайыҡ. Газетаның 8-се номерендә «Хеҙмәт дисциплинаһы юҡ» тигән баш менән МТМ мөдире иптәш Борғановты тәнҡитләгән мәҡәлә баҫылғайны. Тәнҡит ғәҙел булды. Ул, партияның тәүге ойошмаһы йыйылышында ла, производство кәңәшмәһендә лә тикшерелеп, мәҡәләлә күрһәтелгән фактар дөрөҫ, тип табылдылар. МТМ-да хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу маҡсатында күп кенә практик саралар күрелде. Токарный станоктарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн улар уңайлыраҡ урындарға күсерелделәр, запас частәр булдырылды, һәм, иң мөһиме, МТМ работниктарының эшкә килеүен һәм китеүен тикшереү ойошторолдо. Һөҙөмтәләлэр араһында хеҙмәт дисциплинаһы [illegible] ғыны, етештереүсәнлек 1,5—2 [illegible] ға яҡын күтәрелде.

«Тракторист» стена газетаһы [illegible] ике тапҡыр сығарыла. Уның [illegible] һы булып ауыл хужалығы [illegible] ҙары араһында хеҙмәт етештереү[illegible] күтәреү, социалистик ярышты киң йәйелдереү, етешһеҙлектәрҙе һәм [illegible] тәрҙе ваҡытында асыу һәм уларҙы [illegible] да уҡ бөтөрөү, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу һәм, бөтәһенән элек, [illegible] ство планын срогынан алда [illegible] саралар нигеҙендә үтәү мәсьәләләре [illegible] тыртыу тора. Был мәсьәләләрҙе [illegible] лә ауыл хужалығы эштәренең һәр [illegible] кампанияһында сағылдырылып, коллективты государство планын [illegible] үтәүгә юнәлдерәләр. Яҙғы сәсеү [illegible] башланыр алдынан сығарылған [illegible] ҙең береһендә, баш мәҡәлә, [illegible] яҙғы сәсеү осоронда фиҙакәр [illegible] саҡырып яҙҙы.

«Яҙғы баҫыу эштәрен срогынан [illegible] юғары сифатлы итеп тамамлау — [illegible] механизаторҙарының һәм хеҙмәтк[illegible] нең намыҫ эше ул. Уны уңышлы [illegible] рыу менән беҙ, механизаторҙар, [illegible] Тыуған илебеҙҙең экономик ныҡ[illegible] илебеҙҙә коммунизм төҙөү һәм ныҡ[illegible] ныслыҡ булдырыу эшенә вклад [illegible] беҙ». Әйтергә кәрәк, газетаның [illegible] саҡырыуы һәм уның роле [illegible] тә ҙур ғына дәрт һәм хеҙмәт [illegible] ше тыуҙырҙы. Механизаторҙар яҙ[illegible] сыу эштәрен юғары агротехник [illegible] нигеҙендә уңышлы башҡарып, [illegible] урожайға ныҡлы нигеҙ һалдылар. [illegible] МТС хеҙмәтләндергән бөтә колхоздар [illegible] арыш һәм яровой культуралар [illegible] урожай вәғәҙә итәләр.

Газетаның редколлегия члендары [illegible] дуллин, Кәримова, Желтышева һәм [illegible] мов иптәштәрҙең редактор иптәш [illegible] муллин етәкселегендә газетаны ваҡ[illegible] да баҫып сығарыуға, уның тышҡы [illegible] мленнеһен яҡшыртыуға күп көс [illegible] ҙарын һәр бер номерҙа асыҡ күрә[illegible]

«Тракторист» стена газетаһы [illegible] лә 5 көн һайын боевой листоктар [illegible] рылып, улар бөтә трактор бригада[illegible] ла таратыла. Боевой листоктар [illegible] тивте үткән биш көн эсендә МТС-та [illegible] ған яңылыҡтар менән таныштыра[illegible] көн һайын бер тапҡыр сығыусы [illegible] тень бөтә эш төрҙәре буйынса [illegible] тик ярыш һөҙөмтәләрен күрһәтеүсе [illegible] кумент булып тора. Ул да трактор [illegible] даларына бирелеп, уның бер [illegible] БАССР Ауыл хужалығы министрлығы[illegible] һына ебәрелә. Бюллетендә трактор[illegible] гадаларының йыллыҡ эш планы, [illegible] үтәлеше, ягыулыҡҡа экономия [illegible] кестәре яҙыла. Шулай уҡ бында МТС-[illegible] «Почет таҡтаһы» урынлаштырыла. [illegible] ларҙың бөтәһе лә МТС директоры [illegible] литик эштәр буйынса урынбаҫары [illegible] баш бухгалтер етәкселегендә башҡа[illegible]

Шулай итеп, боевой листоктар [illegible] Бюллетень дә, «Тракторист» стена газ[illegible] һының филиалдары булып тора[illegible] «Тракторист» газетаһы коллектив про[illegible] гандист та, агитатор ҙа, ойоштороусы [illegible] булып тора. Уның механизаторҙар [illegible] һында шундай ҙур урын алыуы [illegible] эшселәрҙе ижади хеҙмәткә юнәлде[illegible] уларҙы яңы еңеүҙәргә рухландыра. [illegible] юҡ, Салауат районының Арҡауыл МТС-[illegible] хеҙмәтләндергән колхоздары быйыл [illegible] үткән йылдағы кеүек, юғары урожа[illegible] алырҙар.

З. Исмәғилева.

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының махсус хәбәрсе. Арҡауыл.

АЛДЫНҒЫ МЕТОДТАРҘЫ ПРОИЗВОДСТВОҒА ИНДЕРЕҮ

Өфө киҙе-мамыҡ комбинаты коллективы, үҙған йылға ҡарағанда, 38,2 процентҡа арттырылған быйылғы планды 1951 йылдың 5 декабренә үтәргә, пландан тыш 3 миллион һумлыҡ продукция етештерергә, 400 мең метр туҡыма бирергә, 15 тонна мамыҡҡа, 50 тонна епкә экономия яһарға йөкләмә алғайны.

Был күтәренке планды һәм йөкләмәне новаторҙарҙың, стахановсыларҙың алдынғы эш алымдарын производствоға ҡыйыу индермәй, социалистик ярышты киң йәйелдермәй тороп, уңышлы үтәп сығыуҙы күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын.

Ошо шарттарҙы иҫәпкә алып, комбинаттың партия һәм профсоюз ойошмалары новаторҙарҙың эш методтарын производствоға ныҡышмалы индереүгә айырыуса ҙур әһәмиәт бирҙе. Был тәңгәлдә беҙгә инженер Ковалев методы ҙур ярҙам итте. Комбинатта стахановсыларҙың алдынғы эш алымдарын ныҡлы өйрәнеү, уларҙы дөйөмләштереү, иң яҡшы тип табылған эш алымдарын производствоға индереү киң йәйелдерелде. Быйыл беҙҙең комбинатта еп иләүселәрҙән 170 һәм туҡыусыларҙан 333 кеше иң рациональ эш алымдарын ҡулланып эшләүгә өйрәтелде. Был ахырына тиклем инженер Ковалев методын ҡулланыуға тағы ла 300 кешене өйрәтеү күҙ алдында тотола.

Беҙ эшселәрҙе инженер Ковалев методына өйрәтеүҙе нигеҙ итеп иң алдынғы стахановсыларҙың камиллаштерелгән эш алымдарын алдыҡ. Шершеваның еп иләү машинаһында катушка алмаштырыу, Егорованың таҫма машинаһында таҫма әҙерләү, Калимуллинаның еп иләү машинаһынан еп алыу һәм башҡа алдынғыларҙың айырыуса файҙалы эш алымдарына күп кенә кешеләр өйрәтелде.

Стахановсыларҙың алымдарын производствоға индереү буйынса үткәрелгән практик саралар беҙгә ниндәй һөҙөмтәләр бирҙе һуң?

Ковалев методы буйынса стахановсыларҙың эш алымдарын производствоға индереү, хеҙмәтте бөтә эш ваҡытына тигеҙ бүлеү еп иләүҙә — 105 кешегә, ә туҡыуҙа — 270 кешегә күп станок хеҙмәтләндерергә мөмкинлек тыуҙырҙы. Планочницаларҙың еп алыуға киткән ваҡыты 12 процентҡа ҡыҫҡарҙы. Һөҙөмтәлә улар хеҙмәтләндергән оборудованиелар фронты киңәйҙе. Һоса ҡороу буйынса камиллаштерелгән эш алымдарына эшселәрҙе өйрәтеү айырыуса ҙур эффект бирҙе. Әгәр ҙә туҡыусы, өйрәткәнгә тиклем, һосаны уртаса 8,9 секундта ҡорһа, өйрәткәндән һуң ул һосаны 5,5 секундта ҡора башланы. Шулай итеп, 8 сәғәтлек эш көнендә һәр бер һоса ҡороуҙа 44 минутҡа экономия яһауға һәм һәр бер станокта өҫтәмә 3,4 метр туҡыма етештереүгә мөмкин булды.

Мастерҙар ярҙамсылары туҡыу станоктарын көйләүҙә стахановсы алымдарҙы индереү буйынса ҙур эш башҡарҙылар. 11 алым буйынса станокты көйләү методын 67 кеше үҙләштерҙе. Был тәңгәлдә мастер Филиппов һәм фабрика мөдире Игнатович иптәштәр күп кенә эштәр башҡарҙылар.

Стахановсыларҙың алынғы алымдарын өйрәнеүҙә, дөйөмләштереүҙә һәм уларҙы производствоға индереүҙә инженер-техник работниктарҙың роле айырыуса ҙур. Күптән түгел Ковалев методы буйынса алдынғы алымдарҙы производствоға индереүгә арналған стахановсылар кәңәшмәһе булып үтте. Унда стахановсылар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар. Кәңәшмәлә ҡиммәтле тәҡдимдәр индерелде. Ул тәҡдимдәр хәҙер тормошҡа ашырыла.

Фабком ай һайын социалистик ярыш йомғаҡтарын тикшерә. Социалистик ярышта комбинаттың фабрикалары, бөтә бүлектәр, цехтар, сменалар һәм бригадалар ҡатнашалар. Стахановсыларға үҙ профессиялары буйынса билдәле исемдәр бирелә.

Тик һуңғы ваҡыттарҙа ғына беҙҙең комбинатта һоҡланғыс новаторҙар үҫеп сыҡты. Оҙаҡ йылдар буйына туҡыусы булып эшләгән коммунист иптәш Буткина 864 орсоҡ хеҙмәтләндерә. Ул һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта 7 йыллыҡ норманы үтәне. Хәҙер көндәлек нормаһын 135 процентҡа ла кәмгә үтәмәй. Оборудованиены социалистик һаҡлыҡҡа алып, иптәш Буткина уны өлгәле таҙалыҡта тота. Туҡыусы иптәш Свинцова 6 станок хеҙмәтләндерә. Ул, үҙенең көндәлек нормаһын 150 процентҡа үтәп, отличнo сифатлы продукция етештерә.

Алдынғыларҙың эш алымдарын популярлаштыреүҙа күргәҙмә агитацияның роле ғәйәт ҙур. Стена газетаһы еш стахановсылар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар. Стахановсыларҙың иң яҡшы алымдары, фотографировать итеп, цехтарға, ҡыҙыл мәйештәргә элелә. Бынан тыш, агитаторҙар көн һайын стахановсыларҙың эш алымдары тураһында коллективта бесәдәләр үткәрәләр.

Был уңышлыҡтарға өлгәшеүҙә һәм практик сараларҙы үткәреүҙә комбинат партия ойошмаһы эшселәрҙе һәм инженер-техник работниктарҙы ижади хеҙмәткә рухландырыусы көс булып тора.

Комбинат коллективы алынған күтәренке йөкләмәләрҙе намыҫлы үтәйәсәгенә ныҡлы ышана. Бының залогы булып киң йәйелдерелгән социалистик ярыш, инженер Ковалев методы буйынса стахановсыларҙың алдынғы эш алымдарын производствоға ҡыйыу индереү тора.

Ф. Кондратьев.

Өфө киҙе-мамыҡ комбинаты партбюро секретаре.

Һаулыҡ һаҡлау эштәрен артабан яҡшыртайыҡ!

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты уңышлы үтеп, Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә совет халҡы хужалыҡ һәм культура төҙөлешенең бөтә участкаларында артабан яңы уңыштарға еңеүле рәүештә бара, беҙҙең илебеҙ коммунистик общество төҙөүҙең бөйөк бурыстарын хәл итә. Ошо нигеҙҙә беҙҙең медицина работниктәребеҙ, хеҙмәтсәндәрҙең һаулығын һаҡлау эшендә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Был уңыштар социалистик хужалыҡтың һәм культураның үҫеүенә, алға китеүенә, медицина һәм биология өлкәһендә совет фәненең ҙур ҡаҙаныштарына тығыҙ рәүештә бәйләнгән. Бөйөк физиологыбыҙ И. П. Павловтың алдынғы материалистик учениеләре, Сталин премияһы лауреаты профессор О. Б. Лепешинскаяның күҙәнәктән тыш тормош формалары өлкәһендәге хеҙмәттәре совет һаулыҡ һаҡлау эшенең уңыштарын тағы ла юғарыраҡ күтәрә, медицина работниктәрен яңы еңеүҙәргә дәртләндерә. Партиябыҙҙың һәм хөкүмәтебеҙҙең көндәлек хәстәрлеге һөҙөмтәһендә хеҙмәтсәндәребеҙҙең материаль көн-күрешенең һәм культураһының яҡшырыуы республикабыҙҙа һаулыҡ һаҡлау эштәренең артабан үҫеше өсөн уңайлы шарттар тыуҙырҙылар. Тик 1950 йыл эсендә генә Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлау эштәренә һуғышҡа тиклемге 1940 йыл менән сағыштырғанда өс тапҡырҙан артыҡ расход тотолдо. Республикала больницаларҙың селтәре киңәйҙе. 1950 йылда, больницалар һаны, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 20 проценттан ашыуыраҡҡа, ә койкалар һаны 50 процентҡа тип әйтерлек артты. Тик үҙған йыл эсендә генә Октябрьский ҡалаһында бала тыуҙырыу йорто, нефть эшкәртеү заводында медсанчасть, Иҫке Өфөлә күп профилле больница асылды, Күмер тауҙа, Ишембайҙа, Аскын, Воскресен, Белорет, Йомағужа һәм башҡа райондарҙа больницалар киңәйтелде. 1951 йылда бөтә больницаларҙа ла койкалар һаны арттырыласаҡ. Нефть эшкәртеү заводының медсанчасть эргәһендә, Октябрьский ҡалаһында больницалар асыласаҡ. Күмер тауҙа, Ермолаевкала һәм Учалы райондарында больницалар асыла, Өфөлә [illegible]

[illegible]

Трахома ауырыуына ҡаршы көрәштә [illegible]

[illegible] тибәр ителәр. Трахома ауырыуын булдырмау өсөн яҙлап сара күреүҙе тәьмин

итеү буйынса Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау органдары алдына бик мөһим һәм яуаплы бурыстар ҡуйылған. Был бурыстарҙы уңышлы хәл итеү өсөн киң рәүештә санитар-профилактик саралар үткәреү, был эшкә бөтә дауалау учреждениеләренең, Ҡыҙыл Тәре ойошмаларының актив ҡатнашыуы һәм һаулыҡ һаҡлау буйынса даими комиссияларҙың, профсоюз, комсомол ойошмаларының ярҙам итеүе талап ителә.

Һуңғы йылдарҙа медицина кадрҙары бик күпкә артты, уларҙың квалификацияһы күтәрелде.

Беҙҙең медицина работниктәребеҙҙең фиҙакәр хеҙмәтен партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ юғары баһаланылар. Күптән түгел оҙаҡ йылдар буйына хеҙмәт иткәндәре өсөн республикабыҙҙың 169 медицина работнигы орденләр һәм медалләр менән наградланды. Шуларҙан 26 кешегә Ленин ордены, 12 кешегә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены, 31 кешегә Почет билдәһе ордены, 17 кешегә «Хеҙмәт батырлығы өсөн» медале, 83 кешегә «Хеҙмәт отличнеһе өсөн» медале бирелде.

Һаулыҡ һаҡлау учреждениеләрендә өлгәшелгән уңышлыҡтар менән бер рәттән, күп кенә етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Медицина работниктәре дауалау-профилактик һәм төрлө эпидемияларға ҡаршы сараларҙың сифатын артабан күтәрергә, СССР фәндәр Академияһы менән СССР медицина фәндәре Академияһының берлектә булған сессияһы ҡарарҙары нигеҙендә һаулыҡ һаҡлау эштәрен ҡырҡа үҙгәртеп ҡорорға, һаулыҡ һаҡлау эше практикаһында өлгәшелгән тәжрибәләрҙе киң ҡулланырға тейештәр. Беҙҙең дауалау-профилактика учреждениеләребеҙ ауырыуҙар һанын артабан кәметеү буйынса бөтә сараларҙы күрергә бурыслылар. Ошо йылдың ҡалған яртыһында дауалау учреждениеларын төрлө инструменттар, аппаратуралар, приборҙар, инвентарҙар, медикаменттар һәм дезинфекция средстволары менән артабан байыҡтырыу күҙҙә тотола: шулай уҡ больницаларҙа лабораториялар, рентген кабинеттары, физиотерапевтик кабинеттар [illegible]

[illegible]

М. Сиразетдинова,
Башҡорт АССР-ы һаулыҡ һаҡлау министре.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Сессиялар әҙерлекһеҙ үткәрелә

[illegible]

Х. Миндияров.

Юл төҙөү темпы түбән

[illegible]

М. Шарипов.

Октябрьскийҙан хаттар

1. Башҡортостан нефтенең үҙәге

Ә. БИКЧӘНТӘЕВ.

Юлсы ҡайһы яҡтан ғына Туймазыға килмәһен, уны бер үк ландшафт ҡаршылай: буш ҡалҡыулыҡтар, әйтерһең дә үҙҙәренең ҡыҙыл балсыҡлы ҡабырғаларын күрһәтер өсөн ҡуйғандар; улар йыйырыҡтарында һирәк урман йәшергән аҡ әҙбилле тау итәктәре менән алмашынып тора. Тик ҡайһы бер ерҙә генә ҡалҡыулыҡтар тимер юлынан алыҫлаша. Шул ваҡытта тын йылға буйындағы болондар һәм тигеҙ уйһыулыҡтар асыла.

Көнсығыштан поезд таң алдында килә. Тәбиғәт шаҡ ҡатырлыҡ был иртәнге сәғәттә! Ҡабарынған урман тәҙмәләре, өйрәнелмәгән илдең яҙҙарында үҫкән маяҡтар кеүек, һирәк әкиә вышкалар өҫтөнән күтәрелгән күк горизонт аша нефть державаһы — Девония ата. Өлкәттәге кеүек, был илгә тәүге тапҡыр килгән кешене һәр ваҡыт тәрән тулҡынланыу ала: таныш түгел күк ҡалҡыулыҡтар ашаһындағы «ҡара алтын» иленә ул нисек ҡиылыҡ күрер? Һәм юлсы үҙенең һәр нәмәне белергә тырышыусан күҙен алмай ҡауығып һәм ҡыҙығып яңы ил аса башлай.

Асфальт лента буйлап төпәш тауҙың битләүендә һуҙылған юлдан йылғыр машина тәгәрләй. Мауыҡтырғыс километрҙар ҡаптың ирмаҡ биттәре кеүек, километрҙар югерә.

Әгәр ҙә һинең күршелә күптә күргән нефтсе булһа, ул тәҙеүсе ғорурлығы менән һиңә әйтәсәк:

— Теге вышка бынан бер ай элек юҡ ине.

— Был юлға ес йыл да юҡ.

— Ана теге өйҙәр тырҡ туғыҙынсы йылда эшләнгән.

— Станцияны көҙгә тиклем эшләп бөтәрәбеҙ.

Киң асфальт юл ҙур ҡаланың урамын хәтерләтә. Бында шулай уҡ хәрәкәт. Ҡорос торбалар һәм кирбестәр, мискәләр һәм ағас тейәгән «ГАЗ»-дар, «ЗИС»-тар осрай. Бер-береһен уҙышып ялтырауыҡ ҡанатлы «Победа»лар һәм етеҙ «Москвич»тәр арлы-бирле үтеп торалар. Ситтә, йәнәшәләге юлда, лебердәп һәм зенләп ҡеүәтле тракторҙар бара.

Тарлауыҡтар, тау итәктәре, урман ситтәре, үҙәндәр һәм тирә-яҡтағы бөтә ер нефть вышкалары менән тулған. Бейек булмаған вышкалар эргәһендә иртәнән алып кискә тиклем, кистән алып иртәнгә тиклем аҡ ҡачалкалар баштарын бер күтәреп, бер төшерәләр, әйтерһең дә бөйҙәге аҡ ҡоштар. Бәләкәй палисадникле, ике тәҙрәле ағартылған өйҙәре, йәшел баҡсалары менән Иҫке Туймазы, Нарыш ауылдары артта ҡалды. Һәм ҡапыл боролған саҡта яңы ҡала — Башҡортостан нефтенең үҙәге Октябрьский ҡалаһының мәһабәт панорамаһы асыла.

Ике һәм ес ҡатлы аҡ биналар, яҡты коттеджлар, парктарҙың йәшеллеге, ике туғандаш республикалар — Башҡортостан һәм Татарстан сите булған Ыҡ йылғаһының ҡөмәш тигеҙлеге балҡып, күҙҙәрҙе иркәләй.

Октябрьский беҙҙең республиканың башҡа бер ҡалаһына ла оҡшамаған. Ул иҫке ҡалаларҙан үҙенең архитектураһы, төҙөлөштең ҙур масштабы, иҫ китерлек үҫеш перспективалары менән айырылып тора. Унда иҫке ҡалаларға характерлы һыҙаттар юҡ: сиркәү һәм мәсет манаралары күтәрелмәй, «стилле купец биналары», һүтеп ташларға билдәләнгән өйҙәр, тәҙ беллектәре менән төҙәлгән ҡала ситтәре, урамдарҙың «Бедняцкая», «Нахаловка», «Кладбищенская» тип аталған кешелектең достоинлегын һәм намыҫын хурлаусы ҡырағай исемдәрҙең береһе лә юҡ бында.

2-се номерлы бораулау конторапының партия ойошмаһы секретаре Ашин үҙ телефонын әйткәндә:

— Пугачев урамының 33-сө номерлы йортонда йәшәйем, — тип өҫтәп ҡуя.

Ҡала комитеты работнигы Рамиев ҡунаҡҡа саҡыра:

— Низами урамы, 18-се номерлы йортҡа килегеҙ, минең үҙемдең баҡсам бар... ти.

Ҡыҙҙар Горький һәм Герцен урамы мөйөшөндә күрешеү урыны билдәләйҙәр. Был ҡалала билдәле яҙыусы хөрмәтенә уның исеме менән аталмаған урам юҡ, тиерлек. Пушкин һәм Толстой, Туҡай һәм Ғафури, Некрасов һәм Гоголь урамдары бар.

Бында һәр бер айҙа тиерлек яңы бина эксплуатацияға тапшырыла. Шуға күрә лә урындағы матбуғатта түбәндәге һымаҡ хәбәрҙе йыш күрергә була: «Туймазынефть» тресы 15 квартиралы бина ҡабул итеп алды. Капиталь ремонт конторапының мастеры Новиков, 1-се номерлы промысла операторы Кинйәбаев, 1-се номерлы бораулау конторапы механигы Мульыюков иптәштәрҙең семьялары яңы өйгә күсеү байрамы үткәрҙеләр».

Ҡалала биш йыл эсендә йөҙ мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөлеп, эксплуатацияға тапшырылған.

Тигеҙлек өҫтөнән йәҙҙәрсә йылдар буйы ҡоро тупраҡтан ҡара бағана күтәреп, көньяҡ-көнсығыштың ҡеҫле елдәре иҫкәндәр. Улар баҫыуҙарҙы ҡорытҡан, игендәрҙе һәләк иткән, ҡалала йәшәүселәрҙе тәүге йорттарына уҫал бәрелгән. Шуға күрә лә яңы ҡалаға тәүге көндәрҙән үк тиерлек стихия менән ныҡышмалы көрәш алып барырға тура килде.

Елдәргә ҡаршы ҡоялар! Ҡала тирәһенә йәшел пояс! — Был лозунгылар Октябрьскийҙа беренсе башлап йәшәүселәр ауыҙынан төшмәне.

«Тыуғандан һуң беренсе аҙымынан уҡ беҙҙен ҡала төҙөклек һәм таҙалыҡ өлгөһө булырға тейеш» — тип саҡырҙылар ораторҙар 1946 йылда.

1947 йылдың апрелендә ҡалала 500 төп һары акация һәм сағән ағастары ултыртылған, тип ҡәтлыҡлы отчет бирҙеләр улар.

Ҡаланың төҙөклөгө өсөн көрәш һәр кемдең патриотик бурысы булып әүерелде. Алдынғы йорт хозяйкалары Мөхәмәтьянова һәм Гәрәева иптәштәр иң яҡшы квартира өсөн ярыш инициаторҙары булдылар. Порт коменданты иптәш Залимов, торлаҡ йорттарҙың усадьбаһын ныҡышмалы төҙөкләндереүселәр сафының башында булды. 1947 йылдың 22 майында Сталин премияһы лауреаты, геолог иптәш Мальцев «Правда» газетаһында «Туймазыла йыл әйләнәһенә елдәр ерә. Улар йәй көндәрендә сап болото, ә ҡыш ҡар бурандары килтерә. Ҡаланы йәшелләтергә, урман һаҡлаусы зоналар ултыртырға, парктар, скверҙәр, аллеялар һалырға, йорт эргәһендә ағастар ултыртырға кәрәк» тип яҙҙы.

Биш йыл үтте. Цифрҙарҙың ҡоро колонкалары һөйләйҙәр: ҡаланың беренсе юбилейенә уның урамдарында һәм парктарында 150 мең төп ағас ултыртылған. Хәҙер Октябрьский йәшел баҙистар менән күмелгән, аллеялар тынлығы һәм япраҡтар һалҡынлығы меңдәрсә ҡоштар-йырсылар йыя.

Октябрьский — коммунизм ҡалаһы, ул хәҙерге ваҡыт ҡалаһы ғына түгел, ә киләсәк ҡалаһы ла. Ошо көндәрҙә «Икенсе Баку»ҙың башҡалаһының үҙәк өлөшөн төҙөүгә эш пландары ҡаралып, раҫланды. Өфө һәм урындағы архитекторҙар һоҡланғыс архитектура ансамблен төҙөүҙең оригиналь һәм аҡыллы планын эшләнеләр.

Йәйге иртәлә беҙ ҡала архитекторы иптәш Фронтовский менән Октябрьскийҙең күңелле урамдарынан машинала барабыҙ. Минең ултырҙашымдың йөҙө йәнле, ул һәр бер өй, полисадник, түбәләренә «газ», «һыу» тип яҙылған ҡоҙоҡтар хаҡында дәртле һәм ҡайнар һөйләй. Яҙыусы ла үҙенең яҙған китабы, бораулау мастеры ла бораулаған скважинаһы тураһында ошондай дәрт менән һөйләйҙәр.

Сталин проспектында ес һәм дүрт ҡатлы матур биналар төҙөләсәк, — ти Фронтовский, уйсанланып, — бына бында ҙур биналар менән уратып алынған майҙан буласаҡ.

Ул ҡаланың киләсәге хаҡында һөйләүен дауам итә: бульвар уртаһын газондар, ағастар, фонтандар аласаҡ; бында үҙәк аптека төҙөләсәк, бында яңы мәктәп, моделле аяҡ кейеме, ювелир изделиелар магазины, сәскәләр магазины буласаҡ.

Ҡаланың буласаҡ үҙәгендә әле буш урын. Ләкин бер-ике йылдан һуң был районды таный алмаясағың. Ышанаһың һәм тулҡынланыу менән уйлайһың: кешеләр хәҙерге замандың бөйөк ғалиме, Башҡортостан нефтен алдан күрә белеүсе атайына Иван Михайлович Губкинға мәңгелек һәйкәл ҡуясаҡтар. Моғайын, бронза һәйкәл шул тиклем бейек булыр, ул яңы кен килеүен белдереүсе иртәнге ҡояшты беренсе булып ҡаршылар.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Клуб ташландыҡ хәлдә"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 2 июнь номерендә Ғафури районы «Повдоҙ» колхозының 6-сы бригадаһындағы клубта колхозсыларға культура хеҙмәте күрһәтеү буйынса бер ниндәй ҙә эш алып барылмауы, клубтың ике йыл буйына ҡап һуғыу мастерскойы итеп файҙаланылыуы тураһында хәбәр баҫылғайны.

Ошо айҡанлы Ғафури район Советы исполкомы редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Клуб ташландыҡ хәлдә» тигән хәбәр район Советы исполкомы тарафынан тикшерелеп, унда күрһәтелгән фактлар урынлы табылды. «Повдоҙ» колхозының 6-сы бригадаһындағы клуб бушатылды. Район Советы исполкомы клубты ремонтлау, культура-массовый эштәрҙе юлға һалыу буйынса, колхоз правлениеһына күрһәтмәләр бирҙе. Правление клуб бинаһын тәртипкә килтереү буйынса практик эшкә башланы».

„Үләй МТС-ында хеҙмәт етештереүсәнлеге лә, сифат та түбән"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 2 июнь номерендә Борай районындағы Үләй МТС-ының баҫыу эштәрен башҡарыуҙа колхоздар менән төҙөшкән договорҙы үтәмәүе тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Борай район комитеты редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Үләй МТС-ында хеҙмәт етештереүсәнлеге лә, сифат та түбән» тигән хәбәр ВКП(б) район комитетының бюро ултырышында тикшерелеп, унда күрһәтелгән етешһеҙлектәр бик урынлы тип табылды. Бюро хәбәрҙә асылған серьез етешһеҙлектәрҙе тиҙ бөтөрөү һәм трактор паркының хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм эш сифатын яҡшыртыуға ҡарата практик саралар билдәләне».

Комбайн менән урожай йыйнау мастере

Тормошта кешенең яҙмышын хәл итә торған моменттар була. Арслан Иләт улы Кирәевтең тормошонда бындай боролош моменте булып 1933 йылда уның комбайн менән танышыу ваҡыттары иҫәпләнә.

Элек беҙ Арсландың тормошонда ошо хәл иткес көнгә тиклем булғандар тураһында яҙып китәйек.

...Шишмә станцияһы артындағы ярлы Тирмә ауылы. Яртылаш емерелгән өй. Нужа өйҙән-өйгә күсеп йөрөй. 1908 йылда Иләт Кирәев семьяһында бер ул — Арслан тыуҙы. Ә бөтә семьяның ере тик осьмөнник — 10 сотый самаһы ғына ине. Бына шунда теләһәң нисек йәшә.

Арсландың атаһы һалдатҡа киткәс, бөтә ер эшен башҡарыу семья ҡулына ҡалды.

Ярлы семья яҡты көн күрмәне. Әһүнынан Арсландың атаһы үлеп китте. Өсәһе Дим станцияһында юл ремонтлау эшенә яланды.

Арслан 16 йәшенән алып Өфөлә һәм Димдә грузчик булып эшләне, Сәмәрҡәндкә барҙы. Ул үҙенә ат һатып алды, йөк ташыусы извозчик булырға уйланы...

Меңде туғыҙ йөҙ утыҙ өсөнсө йылдың йәйге саф көнөндә Арслан Кирәев Шишмә машина-трактор станцияһына эшкә килде. МТС эргәһендә торған күк машиналы эштәргә теләне.

— Аңлыҡты үҙе ура, үҙе һуға һәм таҙарта торған иҫкәндергән беҙгәс. Был машинанан инде мин ситкә китә алмаҫым, — тип хәтерләй иптәш Кирәев, һәм ул бына комбайнер ярҙамсыһы, ә һуңынан комбайнер булып эшләй.

Был көндәрҙән алып инде 15 йыл үтте.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Арслан немец баҫҡынсыларына ҡаршы көрәште. Һуғыш еңеү менән тамамланғас, ул ҡабаттан Шишмәгә ҡайтты һәм комбайнға ултырҙы.

Татыу механизаторҙар семьяһы уны үҙ сафына ҡабул итте.

Улдары ла үҫеп етешә башланы. Иптәш Кирәевтең ике улы үҙ агрегатында штурвалсы булып эшләй. Арслан үҙенең стахановсы эштәре һәм новаторлығы менән МТС-та беренселекте яулап алды, 1949 йылда ул «Сталинец—1» комбайны менән 990 гектарҙың урожайын йыйҙы. Былтыр иптәш Кирәев 8507 центнер беренсе сортлы иген һуҡты. Был 51 мең 42 бот тигән һүҙ. Башҡортостанда бер генә комбайнер ҙә был тиклем иген һуҡҡаны юҡ әле.

— Мин былтыр урып һуҡҡан игенде ташыу өсөн, моғайын, ике ҙур вагондар составы кәрәк булыр, — ти шаярып Арслан.

Сағыштырма өсөн шуны ғына әйтәйек. «Сталинец—1» комбайны менән урожай йыйнауҙың государство нормаһы — 340 гектар. Тимәк, данлы комбайнер, үҙенең ярҙамсылары менән, был сезонда дүрт норманы үтәгән.

Иптәш Кирәев ниндәй методтар менән эшләй, ул был уңыштарға нисек өлгәшә? Беҙ шуның менән ҡыҙыҡһынабыҙ.

— Мин үҙемдең комбайнер профессияһынан ситкә сығып бер нәмә лә эшләмәйем. Минең бөтә өлгәшеүҙәрем, бөтәһенән элек, намыҫлы хеҙмәт итеүҙә, бөтә агрегаттағы кешеләрҙең эшкә аңлы мөнәсәбәт итеүендә тора, — ти иптәш Кирәев. — Бөтәһенән элек, машинаның ремонты яҡшы булһын. Мин бер генә детале лә һәм бер генә винтте лә эштә тотҡарлыҡ яһамаҫлыҡ итеп ремонтлайым. Мин беҙҙең оҫтаҙыбыҙ һәм юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндың — урожай йыйнау — ул сезонлы эш. Урожайҙы ваҡытында йыйнаһың — оттоң. Урожай йыйнауҙа һуңланыңмы — оттолдоң, — тигән һүҙҙәрен бер ваҡытта ла онотмайым. Бөйөк юлбашсыбыҙ беҙҙе урожайҙы үҙ ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйнап алыуға өйрәтә һәм мин, комбайнер булыуым арҡаһында, был эшкә һәр ваҡыт әҙер торам. Минең машинам тулы әҙер хәлендә.

Иптәш Кирәев былтыр үҙенең комбайнын 45 сантиметрға оҙонайтты. Комбайн оҙон булғас, һалаумлар оҙаҡыраҡ иләнәләр һәм бабакка орлоҡ китмәй. Шулай итеп, игенде юғалтыуҙарға юл ҡуйылмай.

Иптәш Кирәев битерҙе лә ҡайтанан йыһазландырған. Ул уны машинаның йәрәшә буйынса урынлаштырған, диаметрын ҙурайтҡан. Хәҙер комбайнер машинала өҫәпсе таҙлоҡтыс эшләй. Ул колхоздағы эшкә ярарһыҙ иҫке триерҙе табып алып, унан яңы ҡулайламә эшләй. Был игенде тулыһынса таҙартыуҙы тәьмин итәсәк. Тимәк, иген, ҡабаттан таҙартылып тормаҫтан, туранан-тура элеваторға оҙатыласаҡ.

Иптәш Кирәев комбайны күптән үк әҙер. Комбайнер уны инде эшләтеп тә ҡараны. Ул яҡшы эшләй, яҡшы йөрөй. Шулай ҙа комбайнер һаман да үҙ машинаһы эргәһендә болаша, тикшерә, төҙәтә.

— Ремонт — төп эш ул, — ти иптәш Кирәев. — Күптәр, бигерәк тә йәш комбайнерҙар, ремонтты ентекле үткәрмәйҙәр һәм һуңынан, был баһалап еткермәү арҡаһында, баҫыуҙа ҙур мәшәҡәт күрәләр.

Комбайнер менән трактористың хеҙмәттәшлеге яҡшы ҡуйылған булырға тейеш. Сөнки трактористың етеш, яҡшы эшләүенә күп нәмә бәйләнгән. Иптәш Кирәев агрегатындағы тракторист иптәш Кузьма Елозюк тимер кеше ул. Ул машинаны ниндәй тиҙлек менән йөрөтергә һәм ҡайҙа боролош яһарға икәнлеген яҡшы белә.

Былтыр иптәш Кирәевтең агрегаты урожай йыйнауҙа сәғәт графигы буйынса эшләне. Эш өҫтөндә сәғәт ҡулланып, ул загонды оҙонлоғон, киңлеген үтеү өсөн күпме ваҡыт кәрәк булыуын алдан белде. Шулай итеп, һәр бер әйләнеш минуттар иҫәбендә үткәрелде.

Сәғәт графигы — социалистик ярыштың бер формаһы ул. Ул яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Быны иптәш Кирәевтең комбайн агрегаты эштәре өлгәһендә асыҡ күрергә мөмкин. Машинаны ремонтлау яҡшы сифатлы итеп үткәрелде. Эштә бер төрлө лә авария, боҙолоу, туҡталып тороу булманы. Был урожай йыйнауҙа төп шарттарҙың береһе.

...Кирәев үҙенең мотоциклендә Сафар ауыл Советындағы Ленин исемендәге колхоздың баҫыуына килде. Бында ул урожай йыйнарға тейеш. Данлы комбайнер арыштарҙың һары диңгеҙе буйлап оҙаҡ йөрөнө. Арыштар ике метр оҙонлоҡта, стена кеүек баҫып тора. Арыш инде сәскә ата. Башаҡтар һөтлө оҙға тула башлаған. Улар аҡрын ғына ел менән һелкенеп, данлы комбайнерға баш эйәләр. Арслан бойҙай, көнбағыш, тары баҫыуҙарын да ҡарап сыҡты.

— Әйе, аңлыҡтар уңған, — ти ул үҙ-үҙенә.

Баҫыуҙарҙы ҡарап сыҡҡандан һуң ул колхозға килде. Правлениеға инде, колхоз председателе иптәш Эсәдуллин менән һөйләште.

Ҡайтышлай, юлда ҡарттарҙы осратты. Улар менән һөйләште. Ҡарттар аңлыҡтарҙың уңыуын, йылдың яҡшы килеүен, быйыл урыҡтың иртәрәк башланасаҡлығын, урожайҙы һис бер юғалтыуһыҙ йыйнарға кәрәклеген һөйләнеләр. Комбайнер колхозсы ҡарттарҙың был ябай һүҙҙәрен ихлас тыңланы, һәм үҙенең бәхетһеҙлектә үткән йәшлеген, ярлы ҡарт атаһын хәтерләне. Колхозсыларға бәхетле тормош биргән Совет власын, колхоз ҡоролошон уйланы һәм киң баҫыуҙарҙы һөйөп ҡарап сыҡты.

— Был баҫыуҙарҙың бөтәһе лә беҙҙеке. Уларҙы беҙгә большевиктар партияһы, беҙҙең һөйөклө иптәш Сталин бирҙе, — тине ул үҙ-үҙенә.

Күптән түгел мин колхоз правлениеһында бер плакат күрҙем. Унда, иген — ул тыныслыҡ, тип яҙылған. Әйе, был бик дөрөҫ. Беҙҙең ҡояшлы киң илебеҙҙәге хеҙмәтсәндәр тыныс хеҙмәт менән шөғөлләнәләр һәм уларҙың һәр береһе үҙенең иҗади хеҙмәте менән тыныслыҡты нығытыуға вклад индерә.

Иптәш Арслан Кирәев агрегаты быйыл тағы ла яҡшыраҡ эшләйәсәк. Комбайнер быйыл 1500 гектар майҙанының урожайын йыйнарға йөкләмә алды. Тимәк, ул һәр сменала 40 гектарҙың урожайын йыйнарға, 20 процент яғыулыҡҡа һәм 30 процент запас частарға экономия яһарға һүҙ бирә.

— Ә мин быйыл 2 мең гектарҙы урып йыйнарға уйлайым, — ти иптәш Кирәев. — Был тыныслыҡты нығытыу эшенә минең хеҙмәт вкладым булыр.

Данлы комбайнер Арслан Иләт улы Кирәевтең хеҙмәте урынлы баһаланды. Ошо көндәрҙә СССР Верховный Советы Президиумының Указы менән уға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде.

Иптәш Кирәев быға тиклем Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Почет грамотаһы менән бер нисә тапҡыр наградланды. СССР ауыл хужалығы министры иптәш Бенедиктов уға комбайн менән урожай йыйнау мастеры тигән маҡтаулы исемде бирҙе.

Шишмә машина-трактор станцияһында данлы механизаторҙар күп. Комбайнер Гәрәев һәм Фаизов иптәштәр ҙә иптәш Кирәев өлгәһендә эшләйҙәр. Иптәш Кирәев үҙенең эш тәжрибәләрен комбайнерҙар менән уртаҡлаша. Ул баҫыу корабльдәрендә эшләүсе мастерҙарҙың илебеҙҙә күберәк булыуын теләй.

А. Николаев,
Шишмә МТС-ы.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 21 июнь. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһы 21 июнда, бөтә фронттарҙа ла Корея Халҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәренең отрядтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, 38-се параллелдән төньяҡтараҡ Америка-Англия интервенттәренә һәм лисынмансы армияға ҡаршы һуғыш алып баралар, уның йәнле көсенә һәм техникаһына ауыр юғалтыуҙар килтерәләр, тип хәбәр итте.

20 июнда Кәнбайыш фронтта хәрәкәт итеүсе Халҡ армияһының частәре 229 дошман һалдатын һәм офицерен пленға алдылар.

21 июнда самолеттарҙы күҙәтеүсе уҡсылар дошмандың 3 самолетын атып төшөрҙөләр.

Корея патриоттарының боевой подвигтәре

ПХЕНЬЯН, 21 июнь. (ТАСС). Халҡ армияһының воиндәре Тыуған илдәренең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн батырҙарса көрәшәләр. Кореяның үҙәк телеграф агентствоһы командире Ли Чер Вон булған частең 8-се ротаһының боевой эштәре тураһында хәбәр итә. Был ротаның 35 батыр воины тауҙағы артылышты алып, 11 сәғәт буйына ике лисынмансы полктың өтакаларын кире ҡаҡты. Оборонаны оҫта ҡороп, Корея патриоттары дошмандың һан яғынан өҫтөн торған көстәренең 6 атакаһын пулемет һәм мылтыҡ уттары менән кире ҡаҡтылар. Ҙур юғалтыуҙар яһап, дошман кире сигенде.

Халҡ армияһы зенитчиктәре утынан, шулай уҡ дошман самолеттарын күҙәтеүсе отрядтәрҙән Америка авиацияһы ҙур юғалтыуҙар кисерә. «Минчжу чосон» газетаһы Чжон Бом командовать иткән подразделениенән самолеттарҙы күҙәтеүсе — пулеметтан атыу оҫтаһы Джон Ен Кир тураһында һөйләй. Джон Ен Кир үҙенең боевой иҫәбен уның окобына пикировать итеп осҡан Америка штурмовиген атып төшөрөп, Янгу янындағы һуғыштарҙы асты. Май айында ул дошмандың тағы ла 4 самолетын атып төшөрҙө.

Командире Дзен Юн Сон булған частең зенитчиктәре гүзәл боевой һөҙөмтәләргә өлгәштеләр. Улар Американың тиҫтәләгән самолеттарын атып төшөрҙөләр. Бер ваҡытты зенитчиктәр позицияһына Американың 5 реактив истребителе һөжүм итте. Дошман самолеттарының көслө утына ҡарамаҫтан, зенитчиктәр ут астылар, һәм тиҙҙән орудие командире Ким Иль Чжун бер истребителде атып төшөрҙө. Бер нисә ваҡыттан һуң атака яһаусы самолеттарға ярҙамға тағы ла 12 самолет килде. Ләкин зенитчиктәр атыуҙы дауам иттерҙеләр. Тигеҙ булмаған был һуғыш 4,5 сәғәт дауам итте, унан Корея воиндәре еңеүселәр булып сыҡтылар. 4 самолетты юғалтып, Америка истребителдәре ҡастылар.

Корея халҡ делегацияһының Пекингә килеүе

ПЕКИН, 21 июнь. (ТАСС). Кореяның 88 кешенән торған халҡ делегацияһы 21 июнда Пекингә килде.

Корея халҡ делегацияһын ҡаршы алыу өсөн Пекин вокзалына башҡала общественносенең 500-ҙән артығыраҡ вәкиле килде. Балалар делегация членддәренә сәскәләр бүләк иттеләр.

Башҡала общественносе исеменән Корея халҡ делегацияһын тыныслыҡты яҡлауҙың һәм Америка агрессияһына ҡаршы көрәштең Ҡытай халҡ комитете председателе Го Мо-жо ҡотланы.

Унан һуң Кореяла булған Ҡытай халҡ делегацияһының етәксеһе Ляо Чжен-ци ҡыҫҡаса ҡотлау телмәре менән сығыш яһаны.

Корея халҡ делегацияһы исеменән яуап телмәре менән делегация етәксеһе, профсоюздарҙың бөтә Корея федерацияһы президиумы председателенең урынбаҫары Вон Дон Гюн сыҡты.

Үҙ телмәренең аҙағында Вон Дон Гюн ҡатнашыусыларҙың көслө ҡул сабыуҙары аҫтында ҡотлау иғлан итте: «Йәшәһен бөйөк Сталин! Йәшәһен Ким Ир Сен! Йәшәһен Мао Цзе-дун!».

Брест хеҙмәтсәндәре Анри Мартэнде кисекмәҫтән азат итеүҙе талап итәләр

ПАРИЖ, 21 июнь. (ТАСС). «Юманите» газетаһы, тыныслыҡ өсөн ҡурҡыуҙы белмәүсе көрәшсе француз моряге Анри Мартэн ошо көндәрҙә Брест ҡалаһындағы «Понтанью» төрмәһенә күсерелгәйне, тип хәбәр итә. Ул хәрби-диңгеҙ трибуналы алдына баҫырға тейеш. Брест арсеналының хеҙмәтсәндәре Анри Мартэндең «Понтанью» төрмәһендә ултырғанлығын белгәс, 20 июнда тыныслыҡты героик яҡлаусыны кисекмәҫтән азат итеүҙе талап итеп, төрмә бинаһы янына йыйналғандар. Ҡалала Анри Мартэнде азат итеү өсөн көрәштең урындағы комитете тарафынан баҫылған листовкалар таратылған.

Брест портында торған хәрби карапт̄арҙың моряктәре арсенал эшселәренә үҙҙәренең улар менән солидарлыҡтарын белдергәндәр.

Британия империяһы илдәренең оборона министрҙәренең йәшерен кәңәшмәһе

ЛОНДОН, 21 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәренән күренгәненсә, 21 июнда Лондонда Англия, Австралия, Яңы Зеландия, Көньяҡ Африка Союзы, Көньяҡ Родезия һәм Канаданың оборона министрҙәренең һәм башҡа вәкилдәренең кәңәшмәһе асылған.

Индия, Пакистан һәм Цейлон һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашырға саҡырыуҙы кире ҡаҡҡандар.

Англияның оборона министерствоһының вәкиле, бер аҙна дауам итәсәк һөйләшеүҙәр «бөтөнләйгә йәшерен» буласаҡ, тип белдергән.

Америка адмиралының Римгә килеүе

РИМ, 21 июнь. (ТАСС). Анса агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Төньяҡ-атлантик союздың Европаның көньяҡ зонаһындағы ҡораллы көстәренең күптән түгел главнокомандующийы итеп билдәләнгән Америка адмиралы Роберт Карни 20 июнда Римгә килгән.

Газеталар, Карни Италияға унда үҙенең штабын ойоштороуҙы әҙерләү маҡсатында, шулай уҡ Италияның ҡораллы көстәрен уның командованиеһына тапшырыу [illegible] килгән, тип хәбәр итәләр.

Иран Мәжлесенең ултырышы

ТЕГЕРАН, 21 июнь. (ТАСС). Тегеран радиоһы, 21 июнда Мәжлестең [illegible] ултырышы булып үтте, тип тапшыра. Унда премьер-министр Мосаддыҡ һәм бөтә министрҙар ҡатнаштылар.

Премьер-министр доктор Мосаддыҡ нефть промышленносен национализациялау тураһындағы законды үтәү буйынса хөкүмәт эшмәкәрлеге тураһында доклад менән сыҡты.

Мосаддыҡ [illegible] Иран [illegible] нефть промышленносен национализациялау [illegible] Англия-Иран нефть компанияһы [illegible] вәкилдәре менән [illegible].

Үҙенең докладын тамамлап, премьер-министр, хөкүмәт элекке Англия-Иран нефть компанияһының предприятиеларын ҡабул итеүҙе [illegible] Иран компанияһына [illegible] хөкүмәт [illegible] мәжбүр булды.

Шуға күрә хөкүмәт 20 июнда Мәжлес депутаттарының һәм сенаторҙарының [illegible] ойошторҙо [illegible].

Унан һуң премьер-министр депутаттарҙан хөкүмәт эшмәкәрлеге [illegible].

Нефть промышленносен национализациялау тураһындағы законды, тип дауам итте Мосаддыҡ, Мәжлес һәм сенат кешеләренең [illegible] группаһының теләге буйынса ҡабул итте, тип бер кем дә раҫлай алмай. Был тик Иран халҡының ихтыяры арҡаһында ғына эшләнде. (Депутаттар Мосаддыҡ һүҙҙәрен яҡынан раҫлайҙар).

Унан ары Мосаддыҡ Иран нефть промышленносен национализациялауҙы тормошҡа ашырыу эшендә һуңғы аҙҙа хөкүмәт тарафынан үткәрелгән саралар ҡарар ҡылды.

[illegible] кеҙҙәрен әйтеүҙе һәм, әгәр ҙә ул лайыҡлы булһа, уға ышаныс вотумын күрһәтеүҙе һораны. (Депутаттарҙың: ышаныс өсөн тауыш бирергә! Ышаныс өсөн тауыш бирергә! тигән тауыштар ишетелә).

Тауыш биреү һөҙөмтәһендә ултырышта ҡатнашҡан 92 депутаттың 91-е Мосаддыҡ хөкүмәтенә ышаныс вотумын белдереү өсөн тауыш бирҙе.

Мосаддыҡ хөкүмәтенә ышаныс вотумын белдереү тураһында Мәжлес ҡарары ҡатнашыусыларҙың оҙаҡ дауам иткән ҡул сабыуҙары менән ҡаршыланды.

Башҡорт АССР-ы колхоздарында бесән сабыу һәм силос һалыу барышы*)

(План үтәлеше 1951 йылдың 20 июненә, проценттарҙа)

Тотҡан урыны	Райондар	бесән сабылды	силос һалынған	Тотҡан урыны	Райондар	бесән сабылды	силос һалынған
1	Зианчура	16	5	27	Маҡар	2	14
2	Көйөргәзе	16	1,4	28	Архангель	0,8	16
3	Мәләүез	15	1,7	29	Бөрө	0,6	16
4	Әбзән	15	0,5	30	Байкыбаш	0,2	4
5	Федоровка	12	9	31	Бүздәк	0,1	0,7
6	Шишмә	11	35	32	Ҡыйғы	—	29
7	Йомағужа	11	6	33	Борай	—	25
8	Салкмағош	9	25	34	Шаран	—	22
9	Ҡырмыҫҡалы	9	6	35	Ҡариҙел	—	21
10	Благовар	8	31	36	Оло Теләк	—	21
11	Күгәрсен	8	0,6	37	Асҡын	—	16
12	Кушнаренко	7	13	38	Краснокама	—	15
13	Хәйбулла	7	—	39	Балтас	—	13
14	Стәрлебаш	6	12	40	Иглин	—	12
15	Стәрлетамаҡ	6	5	41	Бәләбәй	—	10
16	Благовещен	5	35	42	Мәсетле	—	7
17	Бәзәлә	5	33	43	Янаул	—	6
18	Туймазы	5	13	44	Баҡалы	—	6
19	Өфө	4,5	20	45	Илеш	—	6
20	Бишбүләк	4,5	5	46	Ҡалтасы	—	6
21	Дәүләкән	4,3	3,4	47	Дүртөйлө	—	5
22	Әлшәй	3	4,5	48	Ҡандра	—	4,5
23	Нуриман	2,8	34	49	Белокатай	—	4
24	Покровка	2,5	73	50	Дыуан	—	3
25	Матрай	2,3	2	51	Миәкә	—	2
26	Ғафури	2	28				

* * *

*) Райондарҙың тотҡан урыны бесән сабыу һәм силос һалыу пландарының үтәлешенә ҡарап билдәләнә. 20 июнгә тиклем ҡайһы бер райондар бесән сабыу һәм силос һалыу эштәрен башламағандар: [illegible], Салауат, Тәтешле, Ауырғазы, Воскресен, Пермяк, Мишкә, Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Ялан, Учалы райондары ошондайҙар иҫәбенә инәләр.

Мал аҙығы туплау

Күгәрсен. (Телефон аша). Районның бөтә колхоздары ла мал аҙыҡтары [illegible] йыл 320 бесән сапҡыс машина һәм ҡул сапҡылары менән 3200-ҙән артығыраҡ кеше ҡатнаша.

Быйыл бөтәһе 20 мең гектар майҙандың бесәне сабылып, йыйналасаҡ.

Силос һалыу эштәре лә ойошҡанлыҡ менән бара. Хәҙер Буденный, Ҡуйбышев исемендәге колхоздар 75 — 100 тонналап ярыуҙа(?) силос һалдылар.

Райом кулемендә бөтәһе 8 мең тонна силос һалынасаҡ.

Сталин, Тельман исемендәге, «Ҡызыл нива», «Дружба» һәм «Техника» ауыл хужалығы артелдәре [illegible] нормаларҙы [illegible] үтәйҙәр. Бесән сабыуҙа район кулемендә көн һа[illegible]

Ғ. Ғилманов.

МАЛ АҘЫҠТАРЫ ӘҘЕРЛӘҮГӘ НЫҠЛЫ ИҒТИБАР

Стәрлетамаҡ. Район колхозсыларында бесән сабыуға һәм мал аҙыҡтары әҙерләү эштәре яҡшы бара. Быйыл күп колхоздар сабынлыҡтарҙы сүп-сарҙан таҙарттылар. Мәҫәлән, «Игенселәр» колхозында 120 гектар сабынлыҡ ағас төптәренән, ҡыуаҡлыҡтарҙан таҙартылды. Бында тәбиғи бесәнлектәр тиреҫ шыйыҡсаһы менән аҫ[illegible] [illegible] ике тапҡырға яҡшы булып үҫәләр. Бесән сабыу һәм йыйыу инвентарҙары тулыһынса ремонтланды, силос соҡоро әҙерләнде.

А. Клементьев.

21 июнда Өфөлә Башҡортостан беренселеге өсөн баскетбол буйынса ярыш башланды.

Һүрәттә: «Искра» I һәм «Искра» II командалары уйын ваҡытында.

И. Панфилов фотоһы.

Башҡортостан беренселеге өсөн волейбол ярышы

Ошо көндәрҙә Өфөнөң «Динамо» стадионында 1951 йылда Башҡортостан беренселеге өсөн волейбол ярышы булды. Ярыш дүрт көн дауам итте.

Бында Октябрьский, Черниковск, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй ҡалаларының һәм «Спартак», «Динамо», «Пищевик» спорт обществоларының ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар командалары ҡатнаштылар. Ярышта волейбол буйынса бер нисә тапҡыр республика чемпионы «Наука» ирҙәр командаһы ла ҡатнашты һәм уҙ был четты исемде ҡайтаҡан яулап алды.

Ҡатын-ҡыҙҙар командаһынан «Динамо» спорт обществоһы волейболисткалары беренсе урынды алдылар.

К. Мизгирев.

Ауыл культура йорто

Белорет районы Сәрмән ауыл культура йорто колхозсыларҙың культура тормошонда ҙур роль уйнай. Һуңғы ваҡыттарҙа унда колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереү эше айырыуса яҡшырҙы.

Быйыл культура йорто бинаһына капиталь ремонт үткәрелде, тамашасылар залы матур итеп йыһазландырылды. Уға 7 мең 300 һумлыҡ мебель һатып алынды һәм клуб библиотекаһының китап фонды байыҡтырылды.

Яҙғы сәсеү осоронда унда колхозсылар өсөн төрлө политик, фәнни темаларға лекциялар уҡылды, беседалар үткәрелде. Күп кенә концерт һәм спектаклдәр ҡуйылды. Һуңғы көндәрҙә художестволы эшмәкәрлек түңәрәктәрендә ҡатнашыусылар һаны икеләтә артты. Ошо көндәрҙә башҡорт драма түңәрәге коллективе Ленин, Молотов, Салауат Юлаев исемендәге колхоздарҙа һәм Белорет ҡалаһында М. Ғафуриҙың «Серле хәбәр» Б. Бикбайҙың «Бригадирҙәр» тигән пьесаларын ҡуйҙы һәм концерт бирҙеләр. Коллективтың сығышы тамашасылар тарафынан яҡшы ҡаралды.

Н. Ғүмәров.

Баймаҡ колхоз-совхоз театрының гастролдәре

Баймаҡ башҡорт государство колхоз-совхоз театры Урал арты райондарында йәйге гастролдә йөрөй. Ул йәш драматург Мөхәмәт Хәйдәровтың «Ирәндек буйында» тигән пьесаһын күрһәтә.

Театр Баймаҡ, Әбйәлил һәм Учалы райондарының колхоздарын хеҙмәтләндерә. Коллективте бөтә урындарҙа ла йылы ҡаршы алалар. Колхозсылар был яңы постановканы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарайҙар.

Театр коллективе үҙенең был яңы постановкаһына күп иждаи көс һалды, [illegible] роль[illegible] ҙур тырышлыҡ менән эшләне.

Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Абдуллина, артист Сарбаев, артистка Ишемғолова һәм артист Күрәмәтов [illegible] тәштәрҙең уйнауҙарын тамашасылар айырыуса ҡыҙыҡһыныу менән ҡарайҙар.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Государствоның 1948 йылғы 2 процентле заемының 1951 йылдың 10 июнендә Чита ҡалаһында булып үткән 7-се отош тиражының

БЕЛЕШМӘ ТАБЛИЦАҺЫ

Отоштар заемдың бөтә 72 разрядендә серия һәм облигацияларҙың түбәндәге номерҙәренә сыҡты:

Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа
000084	49*)	5 000	008422	1—50	400	016573	1—50	1 000	024081	1—50	400	032668	37*)	5 000	041228	1—50	400
000297	21*)	5 000	009139	1—50	400	016717	29*)	10 000	024278	1—50	400	033081	1—50	400	041272	1—50	400
000460	1—50	400	009150	1—50	400	017178	1—50	400	024448	30*)	5 000	033082	1—50	400	041443	1—50	1 000
000668	1—50	400	009382	05*)	5 000	017466	42*)	5 000	024650	1—50	400	033121	1—50	400	041519	1—50	400
000742	1—50	1 000	009391	14*)	5 000	017566	28*)	5 000	024906	1—50	400	033191	1—50	400	041541	1—50	400
000842	1—50	400	009536	1—50	400	017671	43*)	10 000	025001	33*)	10 000	033315	1—50	400	041870	1—50	1 000
000843	1—50	400	009569	1—50	400	017915	19*)	10 000	025513	12*)	5 000	033490	08*)	5 000	042087	1—50	400
001008	01*)	5 000	009875	1—50	400	018020	1—50	400	025709	1—50	400	033786	46*)	5 000	042758	1—50	400
001807	1—50	400	009903	1—50	400	018105	04*)	10 000	025855	1—50	400	034218	1—50	400	042831	1—50	400
002779	1—50	400	010175	44*)	10 000	018242	1—50	400	025996	1—50	400	034234	46*)	5 000	043053	1—50	400
003406	1—50	400	010469	43*)	50 000	018541	1—50	1 000	026583	28*)	10 000	034512	1—50	400	043408	1—50	400
003605	1—50	400	010481	37*)	5 000	018598	1—50	400	026887	1—50	400	034524	1—50	400	043571	06*)	5 000
003776	15*)	5 000	010623	24*)	25 000	018691	23*)	25 000	027413	1—50	400	034937	22*)	10 000	043677	1—50	400
003955	12*)	10 000	011804	1—50	400	018892	1—50	400	027811	30*)	10 000	034970	1—50	400	043794	35*)	5 000
004238	49*)	5 000	011901	1—50	400	018925	1—50	400	027900	1—50	400	035090	37*)	5 000	043866	1—50	400
004240	1—50	400	012117	1—50	400	019187	1—50	1 000	027994	26*)	5 000	035344	02*)	5 000	043926	1—50	400
004257	45*)	10 000	012281	29*)	5 000	019206	1—50	400	028224	1—50	400	035497	05*)	5 000	044439	1—50	400
004440	37*)	5 000	012492	1—50	400	019475	1—50	400	028284	32*)	5 000	035765	1—50	400	044567	32*)	10 000
004576	34*)	10 000	012607	1—50	400	019567	1—50	400	028562	1—50	400	036309	1—50	400	044855	49*)	10 000
004685	1—50	400	012758	04*)	5 000	019625	1—50	400	028591	1—50	400	036777	1—50	400	044868	1—50	400
005002	1—50	400	013550	1—50	400	020174	1—50	400	028794	1—50	400	036809	1—50	400	045164	04*)	10 000
005067	12*)	25 000	013657	30*)	5 000	020355	1—50	400	028849	21*)	5 000	037002	20*)	5 000	045326	1—50	400
005289	1—50	400	013664	12*)	5 000	020360	06*)	25 000	028878	1—50	400	037045	1—50	400	045594	1—50	400
005678	05*)	5 000	013775	50*)	25 000	020362	1—50	400	029130	1—50	400	037091	49*)	10 000	045660	02*)	5 000
005702	37*)	10 000	014045	1—50	400	020657	40*)	10 000	029319	1—50	400	037361	1—50	400	046120	1—50	400
005804	1—50	400	014076	1—50	400	020666	1—50	400	029984	1—50	400	037404	1—50	400	046246	1—50	400
005879	32*)	5 000	014089	33*)	25 000	020841	1—50	400	030044	1—50	400	037407	1—50	400	046320	1—50	1 000
005944	21*)	10 000	014316	1—50	400	020843	1—50	400	030058	15*)	10 000	037604	30*)	50 000	046358	1—50	400
006140	03*)	10 000	014452	1—50	400	021129	1—50	400	030100	1—50	1 000	037611	38*)	10 000	046802	10*)	25 000
006152	03*)	5 000	014486	1—50	400	021449	1—50	400	030422	1—50	400	037754	45*)	5 000	046946	1—50	400
006224	1—50	400	014553	1—50	400	021869	1—50	400	030481	1—50	400	037824	1—50	400	047008	1—50	400
006572	1—50	400	014599	1—50	400	022091	1—50	400	030516	1—50	400	038131	1—50	400	047013	1—50	400
006605	45*)	5 000	014639	1—50	400	022177	1—50	400	031178	1—50	400	038309	14*)	5 000	047028	37*)	25 000
006633	35*)	10 000	014818	1—50	400	022338	36*)	25 000	031207	1—50	400	038325	07*)	5 000	047236	1—50	400
006666	13*)	25 000	014893	1—50	400	022843	1—50	400	031298	1—50	400	038613	1—50	400	047948	1—50	400
006992	1—50	400	015510	1—50	400	022986	1—50	400	031344	1—50	400	038812	1—50	400	048392	1—50	400
007032	49*)	5 000	015568	1—50	400	023137	20*)	5 000	031451	1—50	400	038972	1—50	400	049251	46*)	5 000
007049	1—50	400	015730	1—50	400	023223	1—50	400	031521	1—50	400	039117	1—50	400	049423	1—50	1 000
007144	20*)	5 000	016139	1—50	400	023284	1—50	400	031692	1—50	400	039474	32*)	5 000	049623	29*)	5 000
007154	1—50	400	016224	1—50	400	023521	1—50	400	031843	14*)	5 000	040649	29*)	5 000	049687	1—50	400
007903	1—50	400	016463	1—50	1 000	023676	1—50	400	031941	1—50	400	040685	1—50	400	049800	21*)	5 000
008077	50*)	5 000	016468	1—50	400	024047	30*)	10 000	032015	1—50	400	040823	1—50	400	049815	32*)	10 000
									032426	06*)	5 000	041053	37*)	5 000	049956	1—50	400

*) Ошо серияларғы облигацияларҙың ҡалған 49 номерына 400-әр һумлыҡ отош сыҡты.

Башҡорт АССР-ының Государство хеҙмәт һаклыҡ кассалары һәм Госкредит Управлениеһы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01978 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№123(8840)
1951 йыл
24
ИЮНЬ
йәкшәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА (1-се бит).
И. Бикмәтов. — Бурлы МТС-ында Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы ҡарарын үтәү өсөн көрәш ойошторолмаған. (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. З. Шәрәфетдинов. — Ауылда массовый-политик эште көсәйтергә (2-се бит).
Н. Сулимов. — Цех партия ойошмаһы план өсөн көрәштә (2-се бит).
МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ. — Район газетаһында культура-ағартыу учреждениеләренең эше. (2-се бит).
ПРОПАГАНДИСТАРҒА ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА. В. Поляков. — Ауыл хужалығының артабан күтәрелеше өсөн социалистик ярыш (2-се һәм 3-сө биттәр).
З. Әһлиуллин. — Бригадаларҙа агитмассовый эш (2-се бит).
М. Филиппчев. — Хеҙмәт етештереүсәнлеге үсә. (2-се бит).
Ҡала Советының бишенсе сессияһы (3-сө бит).
ОКТЯБРЬСКИҘӘН ХАТТАР. В. Бикчентаев. — 2. Академик васыяты (3-сө бит).
Әнүәр Ғафури. — Һаҙлат һүҙе (4-се бит).
ХАЛЫҠ-АРА КҮҘӘТЕҮ (4-се бит).

Халыҡ араһында фәнни-ағартыу пропагандаһын киң йәйелдерергә

Социализмдан әкренләп коммунизмға күсеү шарттарында хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙең һәм кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтарын бөтөрөүҙең әһәмиәте сағыштырғыһыҙ үсте. Был айҡанлы тәбиғи-фәнни белемдәрҙе пропагандалау мөһим әһәмиәт ҡаҙана.

Тәбиғәт күренештәрен материалистик аңлатыу, фән, техника һәм культура ҡаҙаныштарын пропагандалау фәнни-ағартыу пропагандаһының төп йөкмәткеһен тәшкил итергә тейеш. Тәбиғәт һәм уның үсеш закондары тураһындағы фәнни белемдәрҙе совет кешеләренең достояниеһы итеү менән фәнни-ағартыу пропагандаһы хеҙмәтсәндәрҙең киң массаларының культура кимәлен күтәрә, культураһыҙлыҡты, юҡ-барға ышаныуҙы һәм дини йолаларҙы бөтөрөүгә, кешеләрҙең донъяға дөрөҫ ҡарашын тәрбиәләүгә ярҙам итә.

Халыҡ араһында донъяның төҙөлөшө, ҡояш һәм ерҙең барлыҡҡа килеүе, төп астрономик күренештәр, ерҙә тормоштоң барлыҡҡа килеүе һәм үҫеүе, кешеләрҙең, үҫемлектәрҙең һәм хайуандарҙың барлыҡҡа килеүе, ауырыуҙарҙың сәбәптәре һәм уларға ҡаршы көрәш, игенселектең һәм малсылыҡтың фәнни нигеҙҙәре, энергия һәм уны файҙаланыу тураһында лекциялар, беседалар ойоштороу, популяр брошюраларҙы һәм мәҡәләләрҙе ҡыҫҡырып уҡыуҙы үткәрергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта культура-ағартыу учреждениеләренең киң селтәрен — клубтарҙы, уҡыу өйҙәрен, библиотекаларҙы тулыһынса файҙаланырға кәрәк, улар тәбиғи-фәнни белемдәрҙе пропагандалауҙың үҙәгенә әүерелергә тейештәр.

Фәнни-ағартыу пропагандаһын ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә беҙҙең күп һанлы агитаторҙарыбыҙ актив ҡатнашырға тейеш. Район һәм куст кәңәшмәләрендә, шулай уҡ агитаторҙарҙың семинарҙарында тәбиғи-фәнни темаларға лекциялар уҡырға һәм фәнни-ағартыу эшенең методикаһы мәсьәләләрен тикшерергә кәрәк.

Массалар араһында тәбиғи-фәнни пропаганданы йәйелдереп ебәреүҙә политик һәм фәнни белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз обществаһының Башҡортостан бүлексәһенең һәм культура-ағартыу учреждениеләре управлениеһының лекциялар бюроһының әһәмиәте айырыуса ҙур. Улар бигерәк тә атеистик темаға квалификациялы лекциялар ойоштора алалар, ләкин, хәҙергә әле, был ойошмалар тәбиғи-фәнни пропаганда, бигерәк тә атеистик пропаганда буйынса ҡәнәғәтләнерлек эшләмәйҙәр.

Партия ойошмалары фәнни-ағартыу пропагандаһына юнәлеш бирергә һәм уны үҙҙәренең контролдәренә алырға бурыслылар. Тәбиғи-фәнни темалағы лекцияларҙың һәм беседаларҙың йөкмәткеһенә ныҡлы контроль булдырырға кәрәк. Был темалағы лекциялар популяр булырға һәм шул уҡ ваҡытта хәҙерге заман фәненә тулыһынса яуап бирергә һәм социалистик төҙөлеш практикаһы менән тығыҙ бәйләнгән булырға тейештәр. Тәбиғи-фәнни темаларға һәр бер лекцияла фәнни, материалистик донъяға ҡарашты пропагандалау һәм һәр төрлө диндең реакцион, фәнгә ҡаршы булған асылын фаш итергә кәрәк.

Республикабыҙҙың ҡалаларында ла, шулай уҡ ауылдарында ла массалар араһында тәбиғи-фәнни темаға лекция уҡырлыҡ, тәбиғәт закондарын яҡшы белгән, етерлек әҙерлекле кадрҙар бар. Ҡала һәм ауыл партия ойошмаларының бурыстары был кадрҙарҙы киң файҙаланыуҙан, уларҙың юғары сифатлы лекцияларҙы әҙерләүенә иң яҡындан тороп ярҙам итеүҙән тора.

Район һәм ҡала Советтарының культура-ағартыу бүлектәре эргәһендәге лекторҙар группалары, политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса Бөтә Союз обществаһының ҡала һәм район бүлексәләре тәбиғи-фәнни белемдәрҙе пропагандалауҙа ҙур урын тоталар. Улар интеллигенцияның киң ҡатламдарын — уҡытыусыларҙы, агрономдарҙы, врачтарҙы, инженерҙарҙы тәбиғи-фәнни белемдәрҙең төрлө тармаҡтары буйынса лекциялар уҡыуға ылыҡтырырға тейештәр.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, республиканың ҡайһы бер ҡалаларында һәм райондарында халыҡ араһында фәнни-ағартыу пропагандаһы бик насар ҡуйылған. Мәҫәлән, Ҡыйғы район Советының культура-ағартыу бүлеге эргәһендәге лекторҙар группаһы бер нәмә лә эшләмәй һәм тәбиғи-фәнни мәсьәләләр буйынса лекциялар ойошторманй. Тәбиғи-фәнни пропаганда мәсьәләләренә иғтибарһыҙ мөнәсәбәт тураһында түбәндәге факт һөйләй. Абзан урта мәктәбенең уҡытыусыһы иптәш Ғөмәров «Ерҙә тормоштоң барлыҡҡа килеүе тураһында» лекция әҙерләгән. Ләкин районда бер кем дә — партия райкомының агитация һәм пропаганда бүлеге лә, район Советының культура-ағартыу бүлеге лә был лекцияның халыҡҡа уҡылыуы тураһында хәстәрлек күрмәгәндәр.

Тәбиғи-фәнни пропаганда Ҡандра, Благовещен, Бәҙәәҙ, Бәләбәй, Воскресен райондарында насар алып барыла. Мәҫәлән, Ҡандра районында тәбиғи-фәнни һәм атеистик темаларға йыл буйына ни бары 17 лекция, ә Воскресен районында — 6 лекция ғына уҡылған.

Фәнни-ағартыу эшен онотоу халыҡтың артта ҡалған өлөшөндә йәшәп килгән дини ҡалдыҡтарҙың йәнләнеүҙәренә килтерә. Халыҡтың бер өлөшө дини йолаларҙы һаҡлай.

Илебеҙҙә коммунизм төҙөлөшө алдынғы белемдәргә, фәнгә эйә булыу, тәбиғәт һәм общественный тормош закондарын дөрөҫ аңлау менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Дин фән менән, донъяға алдынғы совет ҡарашы менән килешә алмай.

Иптәш Сталин былай тип өйрәтә: «Партия дингә ҡарата нейтраль була алмай, ул бөтә һәм һәр төрлө дини йолаларға ҡаршы пропаганда алып бара, сөнки ул фән яғында тора, ә дини йолалар фәнгә ҡаршы баралар...»

Беҙҙең социалистик обществола дингә тыуҙырыуға сәбәптәр юҡ һәм ул айырым кешеләрҙең аңында үткән осорҙоң ҡалдығы рәүешендә генә йәшәй. Беҙҙә дини йолаларҙы тулыһынса бөтөрөү өсөн бөтә шарттар бар. Ләкин был әле, дин үҙенән-үҙе, ныҡышмалы һәм систематик тәрбиә эшенән башҡа үлеп бөтә, тигән һүҙ түгел. Үткән осорҙоң бөтә ҡалдыҡтары кеүек үк, дини йолалар үҙҙәренән-үҙе тыып йәшәүсән булалар һәм үҙ ағышы менән бөтмәйҙәр. Ныҡышмалы тәрбиә эше менән дингә ышаныусыларға был йолаларҙан ҡотолоуға ярҙам итергә кәрәк.

Дини йолаларға ҡаршы көрәште, Ленин күрһәткәненсә, идея юлы менән һәм бары идея юлы менән генә — беҙҙең һүҙебеҙ, беҙҙең матбуғатыбыҙ аша алып барырға кәрәк.

Совет халҡының культура кимәлен артабан күтәреү һәм дини йолаларҙы, юҡбарға ышаныуҙарҙы бөтөрөү бурысы халыҡ араһында тәбиғи-фәнни белемдәрҙе систематик рәүештә таратыуҙы, партия ойошмаларының фәнни-ағартыу, атеистик пропаганда мәсьәләләренә көндәлек иғтибар биреүҙәрен талап итә.

Иптәш Сталин уҡыуыһы нигеҙендә

Республикабыҙҙа культура һәм фән үҫешен алға ебәреүҙә иптәш Сталиндың «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән гениаль хеҙмәте яңы этап асты.

Республикабыҙҙың ғилми-тикшеренеү институттары, юғары һәм урта мәктәптәренең работниктары иптәш Сталиндың тел ғилеме тураһындағы хеҙмәтен ғилми-тикшеренеү, уҡыу-уҡытыу эштәренең нигеҙе итеп алып, республикала культура һәм фәнде алға ебәреүҙә ҙур эштәр башҡарҙылар.

Башҡорт педагогия институтының уҡытыусылар коллективы үткән йылда уҡыуҙар башланғанға тиклем үк, иптәш Сталиндың тел ғилеме тураһындағы хеҙмәтен өйрәнеп, институттың тел, әҙәбиәт һәм башҡа факультеттарының уҡыу программаһын һәм дәрес пландарын ҡайтанан ҡарап, иптәш Сталин күрһәтмәләре нигеҙендә эшкә башланы.

Уҡыу-уҡытыу эштәрен яҡшыртыу маҡсатында институт уҡытыусылары өсөн иптәш Сталиндың тел ғилеме тураһындағы хеҙмәте буйынса семинарҙар үткәрелгән. Был семинарҙарҙа түбәндәге темаларға докладтар һәм лекциялар уҡылды. Мәҫәлән, «Базис һәм өҫҡорма тураһында марксизм-ленинизм уҡыуыһы», «Тел үҫешенең төп закондары тураһында иптәш Сталиндың уҡыуыһы», «Телдең общественный күренеш булыуы тураһында Сталин», «Телдең һүҙлек составы һәм һүҙлектең төп фонды тураһында Сталин», «Телдең грамматик төҙөлөшө тураһында иптәш Сталин», «Милли телдәрҙең килеп сығыуы һәм уларҙың үҫеше тураһында иптәш Сталин» һәм башҡалар.

Бынан башҡа студенттар өсөн айырым лекциялар, докладтар үткәрелә. Башҡорт һәм рус теле, әҙәбиәт кафедралары эргәһендә студенттар өсөн фәнни түңәрәктәр ойошторолоп, был түңәрәктәрҙә студенттар телдең фәнни нигеҙен иптәш Сталин күрһәтмәләре буйынса өйрәнәләр.

Иптәш Сталиндың тел ғилеме тураһындағы хеҙмәте сығыуға бер йыл тулыу айҡанлы 27 июнда институттың ғилми советы ултырышы буласаҡ. Был советта уҡытыу программаһының һәм уҡытыу планының иптәш Сталиндың тел ғилеме уҡыуыһы нигеҙендә тормошҡа ашырылыуының йомғаҡтары тикшереләсәк.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА



Новосибирск. Нәҫелдән килгән тимер юлсылар семьяһы члендәре дүрт туған Коротковтар Новосибирск паровозлар деповында яҡшы дан яулап алдылар. Коротковтарҙың атаһы был депо һалынғандан бирле шунда эшләгән. Туғандарҙың олоһо — Василий депола 1918 йылда, Николай һәм Георгий — 30 йыл тиерлек бынан элек, уларҙың энеһе — Владимир 25 йыл элек килде. Өс туған машинист-инструктор булып, дүртенсеһе, Владимир депола өлкән дежурный булып эшләй.

Хөкүмәт патриот-тимер юлсылар хеҙмәтен юғары баһаланы. Транспортта оҙаҡ йылдар һәм арымай-талмай эшләгәндәре өсөн Василий һәм Николай Коротковтар Ленин орденә, Владимир һәм Георгий — Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградландылар.

Һүрәттә: (һулдан уңға) Василий, Георгий, Николай һәм Владимир Коротковтар.

В. Лещинский фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Калуга ҡошсолоҡ работниктарының ҡиммәтле тәжрибәһе

КАЛУГА. (ТАСС). Өлкәнең күп кенә колхоздары инкубатор себештәрен үҫтереү өсөн инженер Г. К. Григорьев конструкцияһындағы йылытыу приборҙарын ҡулланалар, улар Калуганың «Метшипром» промысловой артеле тарафынан эшләнгәндәр. Мәҫәлән, Малоярославец районында ҡошсолоҡ фермаларының күпселеге ошо приборҙарҙы ҡуллана. Был, себештәрҙең үлеүен, үткән йылға ҡарағанда, ике тапҡырға ҡыҫҡартырға мөмкинлек бирҙе. «Свобода», Крупская исемендәге, «Большевик» ауыл хужалығы артелдәрендә зонт йылытҡыстары арҡаһында инкубатор себештәренең 90 — 93 процентын һаҡлап алып ҡалынды. Износков, Перемышль һәм Боровский райондарының күп кенә колхоздарынан, шулай уҡ «металл тауыҡтарҙың» юғары эффектлеге тураһында хәбәр итәләр.

Калуга ҡош үҫтереүселәренең ҡиммәтле тәжрибәһен Новгород өлкәһенең, Алтай крайының һәм илебеҙҙең башҡа райондарының ҡош үҫтереүселәре лә ҡулланалар.

Үлән орлоҡтарын комбайн менән йыйнау

Колхоз баҫыуҙарында күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡ үләндәрҙең орлоҡтарынан юғары урожай алыу китәлә. Көньяҡ райондарҙың колхоздары яҡын көндәрҙә эспарцетте массовый йыйнауға башлаясаҡтар. Урта Азия һәм Закавказье республикаларында люцернаның орлоҡ сәсеүлектәре өлгөрәләр.

Быйыл йәй үлән орлоҡтарын йыйнауҙа колхоздарға машина-трактор станциялары ҙур ярҙам күрһәтәсәктәр. Улар был маҡсат өсөн уннар меңләгән комбайн булалар.

Колхоздар урожай комбайн менән йыйналасаҡ участкаларҙы комбайндар эшенә ҡамасаулыҡ итеүсе ҡый үләндәренән таҙартып, алдан уҡ әҙерләп ҡуялар.

Урожай йыйнау

СТАВРОПОЛЬ, 22 июнь. (ТАСС). Константиновск МТС-ының механизаторҙары урожай йыйнай башланылар. 22 июндән алып көҙгө бойҙайҙы 25 комбайн йыйнай инде.

Константиновск МТС-ының комбайнерҙары игендәрҙе йыйнауҙы 15 эш көнендә үткәрергә йөкләмә алдылар. Был, иген тапшырыу планын 25 июлгә үтәргә мөмкинлек бирәсәк.

* * *

МАХАЧКАЛА, 22 июнь. (ТАСС). Дағстан яҫылығына урынлашҡан райондарҙа 100-ҙән артығыраҡ колхоз арпа йыйнай башланылар. Көҙгө бойҙай өлгөрә. 9 мең гектарға яҡын бөртөклө ашлыҡ йыйналды ла инде, был эштең 70 процентын комбайндар башҡарҙы.

Колхоздар государствоға иген тапшырыуҙы срогынан алда 10 көн элек башланылар.

Яңы төҙөлөштәргә — иң яҡшы машиналар

КОВРОВ. (Владимир өлкәһе). (ТАСС). Етештерелгән машиналарҙың хеҙмәт итеү сроктарын арттырыуға ҡарар иткән Уралдағы Сталин исемендәге автозавод коллективының башланғысы Ковров экскаватор заводында ҡайнар отклик тапты.

Ковров машина төҙөүселәре үҙ алдарына 1951—1952 йылда экскаваторҙың ремонтһыҙ эшләүенең гарантиялы срогын бер йылдан алып 1,5 йылға тиклем арттырыу бурысын ҡуйҙылар. Эшселәрҙең һәм специалистарҙың ҡиммәтле тәҡдимдәре ер ҡаҙыу машиналарының конструкцияларын камиллаштырыуҙың конкрет планын төҙөргә ярҙам итте.

Хәҙер заводта камиллаштырылған беренсе экскаваторҙы йыйнау тамамлана.

Бахсаһарай районы Андреев исемендәге колхоз Ҡрым өлкәһендә беренсе булып государствоға иген тапшыра башланы.

Һүрәттә: Андреев исемендәге колхоздың автомашиналар колоннаһы яңы урожай игене менән әҙерләүҙәр пунктына бара.

М. Альперт фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Государствоның Смоленск тәжрибә-селекция станцияһы йәшел ашлама итеп ҡулланыла торған күп йыллыҡ люпин үләндәрен үҫтереүҙең агротехникаһын эшләй. Станцияның баҫыуҙарында люпин үләндәрен йәшел ашлама итеп ҡулланыу көҙгө ашлыҡтарҙың һәр гектарынан 29—30-ар центнер урожай алыу мөмкинлеген бирҙе.

Тәжрибә станцияһы күршеләге колхоздарҙы люпин үләне орлоҡтары менән тәьмин итә.

Һүрәттә: тәжрибә станцияһының агротехника бүлеге ғилми сотрудниктары Н. П. Куторга (һулда) һәм комсомолка Н. А. Соболева иптәштәр люпин үләндәренең тамыр системаһын ҡарайҙар.

И. Рабинович фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Бөйөк төҙөлөштәр өсөн стандарт йорттар

СССР Төҙөлөш материалдары промышленносы министерствоһының торлаҡ төҙөү заводтары һәм комбинаттары Волга-Дон судноҙар йөрөй торған каналды һәм Куйбышев, Сталинград гидроэлектростанцияларын төҙөүселәр өсөн беренсе ярты йылда 14 мең квадрат метр стандарт йорт эшләргә заказ алдылар.

Предприятиеләрҙең күпселеге почетлы заказды срогынан алда үтәне. Славянск, Евлашевск, Сталинград һәм башҡа торлаҡ төҙөү заводтарының коллективтары заказдарҙы срогынан алда байтаҡ элек тамамланылар. Улар инде бөйөк төҙөлөштәр адресына 8 квартиралы һәм бер квартиралы 50-нән артығыраҡ стандарт йорт ебәрҙеләр.

Паклевск торлаҡ төҙөү комбинатының коллективы Куйбышев гидростройы адресына күп квартиралы һуңғы 11 йортто ебәреүгә әҙерләнә.

(ТАСС).

Бурлы МТС-ында Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы ҡарарын үтәү өсөн көрәш ойошторолмаған

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы республикабыҙҙың колхоздарында, МТС-тарында һәм совхоздарында комбайндарҙы һәм башҡа урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙың барышы тураһындағы ҡарарында күп кенә МТС-тарҙың, шул иҫәптән Бурлы МТС-ының (Ғафури районы) комбайндарҙы һәм башҡа урожай йыйнау машиналарын ремонтлау планын өҙгәнлеген билдәләп үткәйне. Шулай уҡ был ҡарарҙа район Советы исполкомдары председателдәренең, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәренең, МТС һәм совхоз директорҙарының комбайндарҙы һәм башҡа урожай йыйнау машиналарын үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп ремонтлау буйынса персональ яуаплы булып тороуҙары иҫкәртеп үтелде.

Ләкин Бурлы МТС-ы етәкселәре (директоры Мишин, директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары Вахитов һәм өлкән механик Калашников иптәштәр) Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының был мөһим күрһәтмәһенән үҙҙәренә тейешле һығымта яһамағандар.

Хәҙер быйылғы урожайҙы йыйнау кампанияһы башланыуға һанаулы ғына көндәр ҡалды. Шулай ҙа Бурлы МТС-ында ремонт талап ителгән 17 комбайндың 20 июнгә ҡарата 10-ы ғына ремонтланған. Төҙөк булмаған 7 комбайн моторы күптән үк Стәрлетамаҡ ремонт заводына ебәрелгән булһа ла, МТС етәкселәре был моторҙарҙың яҙмышы менән тейешенсә ҡыҙыҡһынмайҙар һәм ремонттың билдәләнгән срогында үтәлеүен талап итмәйҙәр. МТС-тың мастерскойында 3 станок иҫәпләнһә лә, бөгөнгә ҡәҙәр уларҙың бары береһе генә нормаль эшләй. Ә был хәл ремонт эшенең барышына ныҡ йоғонто яһай. Шуға ҡарамаҫтан, төҙөк булмаған ике станокты ремонтлап хәрәкәткә ебәреү тураһында күҙгә күренерлек конкрет бер сара ла күрелмәй. Шулай уҡ бында башҡа төрлө урожай йыйнау машиналарын ремонтлау менән дә эш маҡтарлыҡ түгел. Булған 9 молотилканың һуңғы көнгә ҡәҙәр 3-һө генә ремонтланған.

Комбайндар ремонтлау эшенең былай оҙаҡҡа һуҙылыуының төп сәбәбе нәмәлә һуң? Был башлыса, МТС етәкселәренең ремонт эшен үҙ ваҡытында юғары сифатлы итеп үтәүҙә тулы яуаплылыҡ һиҙмәүҙәренә, ремонтсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһының сиктән тыш түбән булыуына, графикте үтәү өсөн ныҡлы көрәш ойошторолмауына һәм алдынғы эш методтарын ҡулланыуға әһәмиәт бирмәүгә ҡайтып ҡала.

Ремонтсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһы түҙеп торғоһоҙ насар ҡуйылған. Быны дөрөҫләү өсөн түбәндәге бер нисә фактты килтереп үтеү ҙә етә. Комбайн ремонтлау эшенә беркетелгән иптәштәрҙән Сәлимов 11 июндән 19 июнгә тиклем, Ш. Моталлапов 14 июндән 19 июнгә тиклем, Ситников һәм Носоповтар 18 июндән 20 июнгә тиклем бөтөнләй эшкә сыҡмағандар. Ә Ткачев ремонт башланғандан алып бер генә көн дә эшләмәгән. Быға оҡшашлы фактарҙы тағы ла бик күп килтерергә мөмкин. МТС-та ошондай ярамһыҙ ғәҙәт практикаға ингән. Ремонт эшенә беркетелгән күп кенә эшселәр йәкшәмбе көн ял итергә тип ауылдарына ҡайтып китәләр ҙә, ике-өс көн буйына эшкә килмәйҙәр. Ләкин ошондай түҙеп торғоһоҙ хәлгә МТС етәкселәре килешеп ҡарайҙар, прогул яһаусыларға ҡарата тейешле саралар күрмәйҙәр. Ремонтсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм көндәлек нормаларҙы арттырып үтәүҙә социалистик ярышты йәйелдереү буйынса агитацион-массовый эш алып барылмай. Комбайндар ремонтлауҙа Черепанов һәм Исламғужин иптәштәр эш нормаларын систематик арттырып үтәп, һоҡланғыс эш өлгөләре бирәләр. Ләкин бында уларҙың тәжрибәләрен киң таратыу нигеҙендә ремонт эшенең темпын күтәреүгә өлгәшеү буйынса практик эш алып барылмай.

МТС эшселәре араһында агитацион-массовый эш алып барыу, политик информациялар үткәреү, мөһим темаларға лекциялар ойоштороу буйынса ҙур-ҙур пландар төҙөлә һәм саралар билдәләнәлә. Ләкин, үкенескә ҡаршы, ғәҙәттә уларҙың күпселек өлөшө тормошҡа ашырылмай, тик ҡағыҙҙа ғына тороп ҡала бара. Директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Вахитов һәм бындағы партия ойошмаһы хужалыҡ бурыстарын уңышлы үтәүҙә политик-массовый эштең ролен баһалап еткермәйҙәр әхиры. Шулай булмағанда был эш тулыһынса үҙ ағышына тапшырылмаҫ ине.

Шулай уҡ бындағы комбайн паркы әлегә тиклем етерлек һанда механизатор кадрҙар менән тәьмин ителмәгән. Үҙе йөрөй торған комбайнда эшләү өсөн 8 комбайнер етешмәй. Ләкин МТС етәкселәре был кадрҙарҙы булдырыуҙа йылдам саралар күрмәйҙәр, тик һөйләнеү менән генә ваҡыт үткәрәләр.

Ремонтсыларға тейешле культура-тормош шарттары тыуҙырылмаған. Ремонт эше менән шөғөлләнеүселәр өсөн ни бары 15 кеше һыйҙырышлы ятаҡ торлаҡ бар. Хатта ул да кәрәгенсә йыһазландырылмаған. МТС эргәһендә клуб, ҡыҙыл мөйөш булһа ла, уларҙа эш механизаторҙарҙы үҙҙәренә йәлеп итерлек итеп ойошторолмаған. Клубта алдан уйланылған ныҡлы план буйынса эш алып барылмай.

Һүҙ уңайында шуны ла әйтергә кәрәк. «Башсельхозснабтың» Стәрлетамаҡ бүлеге һәм Стәрлетамаҡ ремонт заводы комбайндарҙы ремонтлау эшендә Бурлы МТС-ына яҡындан ярҙам күрһәтергә тейеш. Ләкин улар был өлкәлә үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты тейешенсә үтәмәйҙәр, ярҙам күрһәтеү тураһында тик вағәҙәләр биреү менән генә ҡәнәғәтләнәләр.

Был МТС-тың механизаторҙары урожай йыйнауға әҙерләнеүгә бағышланған үҙҙәренең дөйөм йыйылыштарында комбайндарҙы һәм башҡа ауыл хужалығы машиналарын үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп ремонтлау, ашлыҡты урып-йыйнауҙа, һуғыуҙа юғары күрһәткестәр биреү, юғалтыуҙарға юл ҡуймау һәм урожай йыйнауҙы ҡыҫҡа срокта тамамлау буйынса үҙҙәренә социалистик йөкләмәләр алғайнылар. Быны үтәү һәр бер комбайнерҙың, уның ярҙамсыһының һәм һәр бер трактористың намыҫ эше.

Быйылғы тәбиғи шарттар урожайҙың юғары булыуына һәм игендең тиҙ өлгөрөүенә тулы гарантия бирә. Шуға күрә лә беҙгә урожай йыйнауға әҙерлек кампанияһының һәр бер сәғәте бик ҡәҙерле. Һәм ул был эшкә хәҙерҙән үк бөтә көстө, энергияны мобилизовать итеүҙе талап итә.

И. Бикмәтов,
(махсус хәбәрсебеҙ).

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Ауылда массовый-политик эште көсәйтергә

Ваҡ колхоздарҙы эреләтеү һәм уларҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу социалистик ауыл хужалығын артабан үҫтереү өсөн көрәштә иң мөһим сараларҙың береһе булып тора. Эреләтелгән колхоздарҙың правлениеларына хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу һәм эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу юлдарын табыуҙа ярҙам күрһәтеү, бригадаларҙа һәм малсылыҡ фермаларында массовый-политик эште юғары кимәлгә күтәреү колхоз партия ойошмаһының төп бурысы булып һанала. Был саралар коллектив хужалыҡ алдында торған төп мәсьәләләрҙе — ауыл хужалығы культураларының уңдырышлылығын күтәреүҙе, общественный малдарҙың һанын арттырыуҙы һәм продукты биреүсәнлеген күтәреүҙе тәьмин итәсәк.

Коллектив хужалыҡҡа етәкселек итеүҙе һәм массовый-политик эште дөрөҫ ойошторған күп кенә эреләтелгән колхоз партия ойошмалары беренсе уңышлы эш һөҙөмтәләрен күрһәттеләр ҙә инде. Быға миҫал итеп Хәйбулла районы «Красная звезда» колхозы партия ойошмаһын (секретаре иптәш Карманов) алырға мөмкин. 22 коммунисты эсенә алған был партия ойошмаһы колхозға етәкселек итеү мәсьәләләрен дөрөҫ хәл итеүгә һәм партия-политик эште хужалыҡ эше менән дөрөҫ бәйләп алып барыуға өлгәште, бөтә агитацион-массовый эште колхоз алдында торған хужалыҡ бурыстарын уңышлы үтәүгә йүнәлтте. Яҙғы сәсеүгә әҙерләнеү һәм уны үткәреү мәсьәләләре бер нисә тапкыр партбюро ултырыштарында һәм партия йыйылыштарында тикшерелде. Яҙғы сәсеүгә әҙерләнектә һәм баҫыу эштәре барышында етешһеҙлектәр асылып, уларҙы бөтөрөү саралары билдәләнде. Партия ойошмаһы колхоз правлениеһының эшмәкәрлегенә партия контроленә дөрөҫ тормошҡа ашыра. Партия йыйылыштарын тейешле әҙерлек менән үткәреп, унда ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың тулыһынса тормошҡа ашырылыуын тәьмин итә.

Ләкин, ҡыҙғаныска ҡаршы, Хәйбулла районының күп кенә партия ойошмалары колхоздарҙы эреләткәндән һуң үҙ алдарына килеп баҫҡан яңы, ҡатмарлы бурыстарҙы үтәүгә тейешенсә яуаплы ҡарашта булманылар. Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһы (секретаре иптәш Ильбаков) үҙенең эшен планһыҙ алып барҙы, колхозсылар араһында политик-аңлатыу эше үткәрелмәй, коммунистар колхоз производствоһының яуаплы участкаларына беркетелмәгән. Колхозда социалистик ярыш ойошторолмаған. Колхозсылар өсөн 1951 йылда бер генә лекция, бер генә доклад та булғаны юҡ. Колхозсыларҙың агрозоотехник уҡыуҙары алып барылмай. Коммунистарҙың политик уҡыуҙары үҙ ағышына тапшырылған.

Колхозға беркетелгән тракторҙарҙың эштәренә иҫәп алып барылмай. Бер ерҙә лә күрһәткес таҡтаһы ойошторолмаған, көндәлек эш менән колхозсыларҙы таныштырып барыу сараһын күргән кеше юҡ. Агитаторҙар колхозсылар араһында булмайҙар. Ошо етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн партия ойошмаһы бер ниндәй ҙә көрәш алып бармай. Шул арҡала тракторсыларҙың күбеһе көндәлек эш нормаларын үтәмәйҙәр, күп ваҡытта тракторҙар ватылыу сәбәпле, бушҡа ултыралар; эштең сифаты түбән. Партия ойошмаһының һәм колхоз правлениеһының эшкә шулай яуапһыҙ ҡарауы сәбәпле колхоз яҙғы сәсеүҙе тәүге ителмәслек һуҙҙы.

«Новый путь» колхозында ла шундай уҡ хәл. Партия ойошмаһы (секретаре иптәш Кривошеев) агитаторҙарҙың эшенә етәкселек итмәй. Агитаторҙарҙан Пешнигорова 7 көн, Самохина 10 көн буйына колхозсылар араһында булмағандар. Тракторсылар араһында социалистик ярыш ойошторолмаған. Бригада йыйылыштары үткәрелмәй.

Был колхоздарҙың партия ойошмалары секретарҙәре — Ильбаков һәм Кривошеев иптәштәр гәмһеҙлектән уянырға, партия-ойоштороу һәм партия-политик эшкә һынылыш яһарлыҡ киҫкен саралар күреп, ауыл хужалығы культураларының уңдырышлылығын күтәреү, общественный малдарҙың һанын һәм продукты биреүсәнлеген арттырыу өсөн көрәшкә бөтә көстө туплаурға бурыслылар.

З. Шәрәфетдинов.

Цех партия ойошмаһы план өсөн көрәштә

Белорет металлургия заводы беренсе кварталда насар эшләне. Ошо иҫәптән заводтың мартен цехы ла производство планын үтәй алманы. Ул илебеҙгә йөҙәрләгән тонна ҡорос еткермәне. Был артабан түҙеп тороу мөмкин булмаған хәл булып сыҡты, цех партия ойошмаһы [illegible] баҫты.

Беҙ был етешһеҙлектең нисек сығыу юлдарын асыҡ партия йыйылышында ҡуйып тикшерҙек. Шулай уҡ был мәсьәлә, партия ойошмаһы инициативаһы менән, цех һәм сменаларҙың производство кәңәшмәләрендә тикшерелде. Продукция эшләп сығарыуҙы арттырыу һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү буйынса конкрет саралар билдәләнде. Коммунистар производство планын үтәү өсөн көрәштә хәл итеүсе участкаларға, стахановсы вахталарға баҫтылар.

Цех коллективын план өсөн көрәштә ныҡышмалы хеҙмәткә мобилизовать итеү буйынса киң күләмдә агитацион-массовый эш ойошторҙоҡ. Коммунистарҙан Попов һәм Махнявов иптәштәр сменаларҙа, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре өсөн ҡоростоң ҙур урын тотоуы тураһында, беседалар үткәрҙеләр. Эшселәр араһында ҡыскырып газета уҡыуҙар ойошторолдо, цехта көн һайын стена газетаһы сығарыла башланы.

Партия ойошмаһы [illegible] эшен башлап ебәрҙе. [illegible]

Цех партия ойошмаһы эшселәр, инженер-техник работниктар коллективының социалистик ярышын киң йәйелдереүҙе тәьмин итте. Был саралар хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә ыңғай һөҙөмтәләр бирҙеләр. [illegible] Цех айлыҡ планды байтаҡҡа арттырып үтәп, илгә пландан тыш йөҙәрләгән тонна ҡорос иретеп бирҙе. Быға тиҙләтелгән иретмә биреү методын киң ҡулланыу ярҙам итте. Цех ундай иретмәне ай эсендә 76 тапҡыр бирә алды. Цех мейестәр майҙанының бер квадрат метрынан план буйынса ҡаралған 5,78 тонна урынына 6,50 тонна ҡорос иретеп алды.

Цех коллективының социалистик ярышында коммунистар алғы сафта баралар. [illegible] Шарафутдинов бригадаһы [illegible]

Коммунист Хузеев етәкселек иткән улаксылар бригадаһы фәҡәт отлично сифатлы продукция биреп эшләй. [illegible]

Мартен цехы хәҙер ҙә план өсөн көрәш темпын кәметмәй. Беҙ [illegible] артабан үҫтереү, яңынан-яңы еңеүҙәргә өлгәшеү өсөн көрәшәбеҙ.

Н. Сулимов,

Белорет металлургия заводы мартен цехының партбюро секретаре.

Бригадаларҙа агит-массовый эш

Юғары урожай өсөн көрәштә беҙҙең колхоз партия ойошмаһы үҙенең төп бурысы итеп ҡуйҙы. Был бурысты уңышлы үтәү өсөн ул бөтә агитацион-массовый эштең үҙәген баҫыу становтарына, урожай өсөн көрәштең хәл итеүсе участкаларында эшләүселәр араһына күсерҙе.

Һәр аҙна һайын колхозда «бригада кенәштәре» үткәреп торабыҙ. «Бригада кенәштәрендә» агитаторҙар үҙҙәре беркетелгән бригадаларҙа беседалар үткәрәләр, докладтар яһайҙар. Беседалар һәм докладтар һәр ваҡыт бригадалағы практик эш барышына бәйләп, конкрет факттар менән байытып үткәрелә. Агитаторҙар был кәңәштә алдан әҙерләнеп киләләр, агитколлективта инструктив докладтар тыңлайҙар.

«Бригада кенәшендә» агитаторҙар колхозсылар менән социалистик ярыштың барышын тикшерәләр. Бригадаға сыҡҡанға тиклем беҙ агитаторҙарҙы колхозда социалистик ярыштың барышы һәм баҫыу алдынғыларының эш тәжрибәләре менән таныштырабыҙ.

Беҙҙең агитаторҙарыбыҙ баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларына социалистик ярыш ойоштороуҙа яҡындан торып ярҙам күрһәтеүҙән тыш, колхозсылар менән планлы рәүештә политик темаларҙа беседалар үткәрәләр, докладтар менән сығыш яһайҙар. Улар «Ауыл хужалығында эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланырға», «СССР тыныслыҡ һәм демократия иле», «Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың йомғаҡтары» тигән темаларға доклад яһанылар.

Колхоз партия ойошмаһы агитацион-массовый эште киләсәктә тағы ла киңерәк йәйелдереү сараһын күрә. Беҙ хәҙер төп иғтибарҙы, мал аҙығы әҙерләү эшен ойошҡан рәүештә үткәреүгә, сәсеүлектәрҙе яҡшы тәрбиәләп, мул урожай үҫтереүгә һәм уны юғалтыуһыҙ йыйып алыу өсөн урожай йыйыуҙы тулы әҙерлек менән ҡаршылауҙы тәьмин итеүгә тупланыҡ.

З. Әһлиуллин,

Учалы районы, «Октябрь» колхозы тәүге партия ойошмаһы секретаренең урынбаҫары.

Хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫә

Коллектив стахановсы бригадаларға, цехтарға һәм предприятиеларға күсеү өсөн көрәштә инженер Ковалев методы айырыуса ҡиммәтле. Уның методы айырым стахановсыларҙың эш алымдарын дөйөмләштереп өйрәнеүҙән һәм уны бөтә эшселәргә лә таратыуҙан тора.

Инженер Ковалев методы «Ишембайнефть» тресы бораулау конторатының долотолар цехында киң ҡулланыу тапты. Долотолар цехы — контораның иң әһәмиәтле цехтарының береһе. Сөнки цех коллективы долотоларҙы ремонтлау эшен башҡара.

Колонковый долотоларҙы ремонтлау буйынса электросварщиктарҙан Дубровин һәм Горшенев иптәштәрҙең эш алымдары өйрәнелде һәм дөйөмләштерелде. Был процесс 5 операцияға бүлеп тикшерелде. Хронометраж күҙәтеүҙәр уҙғарғандан һуң электросварщик иптәш Дубровиндең эш алымы яҡшыраҡ икәнлеге асылды. Ул бер долотоны ремонтлауҙы нормала күрһәтелгән 300 минут урынына 184 минутта тамамланы. Норма 163 процентҡа үтәлде.

Һуңынан был алым стахановсылар мәктәбендә өйрәнелде. Бөтә электросварщиктар ҙа иптәш Дубровиндең эш алымы нигеҙендә эшләй башланылар. Һөҙөмтә яҡшы булды. Бөтә электросварщиктар ҙа хәҙер нормаларын 130—160 процентҡа үтәйҙәр. Мастер иптәш Комендантовтың бригадаһы ике квартал буйы «Отлично сифат бригадаһы» исемен алды.

Инженер Савичев һәм электросварщик Дубровин иптәштәр долотоларҙы ремонтлауҙың технологик процесын артабан камиллаштыралар. Долотоларҙың корпусынан лапаларҙы киҫеп алыу операцияһын башҡарыу ике тапҡырға ҡыҫҡартылды. Иптәш Савичев индергән тәҡдимде производствола ҡулланыу долотоларҙы йыйнау ваҡытын 4 тапҡырға тиҙләтте. Бер электросварщикка ике электросварка агрегаты беркетелде. Хәҙер электросварщик, элекке кеүек, ҡыҙған агрегаттың һыуынғанын көтөп ултырмай. Береһе һыуынғансы, икенсе агрегат менән эшләй. Шулай итеп, буш тороуҙар тулыһынса бөтөрөлдө.

Беҙ стахановсы алымдарға икенсе тапҡыр хронометраж күҙәтеүҙәр үткәрҙек. Һөҙөмтәләр тағы ла яҡшырҙы. Электросварщик иптәш Дубровин бер долотоны ремонтлау эшен 300 минут эсендә башҡарыу урынына 91,4 минутта тамамланы. Был, планды 329 процентҡа үтәү тигән һүҙ. Ә иптәш Горшенев шул уҡ эште, 100,5 минутта башҡарып, нормаһын 298,5 процентҡа үтәне.

Долотолар ремонтлауҙа Ковалев методын ҡулланып эшләү һәм сварка технологияһын камиллаштырыу һөҙөмтәһендә, ошо көндәрҙә беҙ цехтан бер электросварка агрегатын бушатып икенсе урынға биреүҙе күҙҙә тотабыҙ.

Шулай итеп, беҙҙә долотолар цехы коллективы ғына түгел, ә контораның бөтә коллективы ла стахановсы алымдарҙы производствола файҙаланыу өсөн көрәшә. Уларҙың бөтә теләктәре — йыллыҡ производство программаһын һәм Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталинға яҙған хатында алынған йөкләмәләрҙе срогынан алда арттырып үтәү. Бының өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлектәр бар.

М. Филиппчев,

«Ишембайнефть» тресы бораулау конторатының хеҙмәтте ойоштороу бүлеге начальнигы.

МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ

Район газетаһында культура-ағартыу учреждениеларенең эше

Учалы районында массовый-политик эштең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында ВКП(б) Өлкә Комитеты ҡарар ҡабул иткәйне.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһының был ҡарары райком пленумында тикшерелде һәм уны тормошҡа ашырыу өсөн конкрет саралар билдәләнде. Пленумда ҡатнашыусылар ВКП(б) райкомының һәм партияның тәүге ойошмаларының массовый-политик эште баһалап еткермәүҙәрен бик ныҡ тәнҡитләнеләр. Райондың хеҙмәтсәндәре араһында агитацион-массовый һәм культура-ағартыу эштәрен ойоштороуҙа ҙур етешһеҙлектәр урын алған. «Рысай», «Ағыштай» һәм XVIII партсъезд исемендәге колхоздарҙа агитколлективтар насар эшләйҙәр. Бындағы культура-ағартыу учреждениелары эшендә түбән торғоноҡ етешһеҙлектәр йәшәп килә.

ВКП(б) Өлкә Комитеты тарафынан был ҡарар өлкә газеталарында иғлан ителеүенә хәҙер ярты йыл ваҡыт үтте. ВКП(б) райкомының органы «Сталин байрағы» газетаһы редакцияһы был ҡарарҙы тормошҡа ашырыуҙа райондың партия, совет һәм культура-ағартыу учреждениеларена ярҙам күрһәтеү буйынса конкрет саралар күрергә, уны үтәү өсөн большевистик көрәш алып барырға бурыслы ине. Был бурысты үтәүҙә район газетаһы редакцияһы ниндәй саралар күрҙе һуң? Айырым алғанда **культура-ағартыу учреждениеларенең** эше газета биттәрендә нисек яҡтыртыла?

«Сталин байрағы» газетаһы редакцияһы быйыл «Культура-ағартыу учреждениеларенең эшенә иғтибар» тигән бер баш мәҡәлә һәм бер нисә хәбәр урынлаштырған. Шулар иҫәбенән — «Беҙҙең ауыл библиотекаһы нисек эшләй?» тигән баш аҫтында Яңы Байрамғол ауыл библиотекаһы мөдире иптәш М. Мортазиндың эш тәжрибәһе бирелгән. Былар газетаның бер ни тиклем уңышлы яғы булып торалар.

Ләкин редакция работниктары юғарыла күрһәтелгән ҡарар менән уларҙың алдына ҡуйылған талаптарҙы үтәүҙән бик алыҫ торалар әле. Районда культура-массовый эштәрҙе үҙ юғарылығына күтәреү өсөн көрәштә газета үҙ бурысын үтәүгә өлгәшә алмаған.

Культура-ағартыу учреждениеларенең эше тураһында газетала урынлаштырылған хәбәрҙәр әҫтән-әҫтән генә яҙылғандар, был учреждениеларҙың эшенә тейешле анализ бирелмәгән. Клубтарҙың, уҡыу өйҙәренең, библиотекаларҙың эштәрен тикшереү буйынса бер генә тапҡыр ҙа хәбәрселәр рейде ойошторолмаған. Район Советы исполкомы культура-ағартыу бүлеге работниктарының насар эшләүен тәнҡитләгән бер генә материал да бирелмәгән.

Билдәле булыуынса, Кирәбе, Илсе, Ахун, Тәтлимбәт, Миндәк клубтары, Науруз уҡыу өйө һәм Илсеғол библиотекаһы халыҡ араһында культура-ағартыу эштәрен киң йәйелдергәндәр. Был культура-ағартыу учреждениелары эштәһендә ойошторолған лекторийҙар ҙа яҡшы ғына эшләп киләләр.

Ләкин газета ошо алдынғы клубтарҙың, уҡыу өйҙәренең, библиотекаларҙың эш тәжрибәләрен башҡаларға күсереүгә, унда эшләүсе работниктарҙың сығыштарын ойошторғмай.

Районда 4 ауыл библиотекаһы, 9 ауыл клубы, 14 уҡыу йорто бар. Уларҙың күбеһе тейешенсә ҡулайлаштырылған йорттар менән тәьмин ителмәгән. Ауыл Советтары һәм колхоз правлениелары ауыл клубтар һәм уҡыу өйҙәре һалыу тейешлеген күрмәйҙәр. Ул ғына ла түгел, «Берлек», «Йәйыҡ», «Коммунар», «Урал» һәм XVIII партсъезд исемендәге колхоздарҙа клубтарҙы иген келәтенә әйләндергәндәр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, «Сталин байрағы» газетаһының редакцияһы (редакторы иптәш Ғәлләмов) культура-ағартыу учреждениеларенең эшен баһалап еткермәүселәрҙе тәнҡитләмәй, мәсьәләне райондың партия һәм совет органдары алдына ҡуйып, сара күреүҙе үҙенең бурысы итеп һанамай.

Ауыл Советтары һәм колхоз правлениелары культура-ағартыу эштәре өсөн билдәләнгән аҡсаларҙы тулыһынса файҙаланмайҙар. Ҡаҙаҡкүл, Иҫке Байрамғол, Һәйәнлек ауыл Советтары уҡыу өйҙәре өсөн бер-ике дана газетаға яҙылыу менән сикләнгәндәр. Күпселек клубтар эргәһендә ойошторолған үҙ эшмәкәр түңәрәктәрҙең һәм лекторийҙарҙың эшен йәйелдереүгә иғтибар ителмәй. Ә газета биттәрендә был мәсьәләләр бары тик осраҡлы рәүештә генә яҡтыртылалар.

Хеҙмәтсәндәрҙе коммунизм рухында тәрбиәләүҙә культура-ағартыу учреждениеларенең роле бик ҙур. Улар колхоздарҙы һәм совхоз эшселәрен юғары урожай алыу, общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын үтәү, социалистик Тыуған илебеҙҙе азыҡ-түлек менән тағы ла байытыу өсөн көрәшкә әйҙәп күтәрергә, Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашыу хоҡуғын алыу өсөн социалистик ярыш ойоштороуға тейештәр.

Клубтар, уҡыу өйҙәре, библиотекалар ауылдың культура усаҡтары булып торалар. Совет халҡының культура-техник кимәле көндән-көн яҡшыра бара һәм уның менән хеҙмәтсәндәрҙең культура талаптары ла үҫә. Район газетаһының редакцияһы культура-ағартыу учреждениеларенең эшен бөтә яҡлап, системалы һәм планлы рәүештә яҡтыртырға, алдынғыларҙың эш тәжрибәһен башҡаларға күсерергә, етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡит утына саҡырылған. Райондағы бөтә культура-ағартыу учреждениеларенең эшен юғары кимәлгә күтәреүҙе тәьмин итеү өсөн редакция работниктары арымай-талмай көрәш алып барырға тейештәр. ВКП(б) Өлкә Комитетының ҡарарын әҙмә-әҙ тормошҡа ашырыу өсөн көрәш — район газетаһы работниктарының боевой бурысы.

Дүртөйлө хеҙмәтсәндәре өлгөһөндә

Оло Теләк районының Киров исемендәге ауыл хужалығы артеле члендары мәктәптәрҙе һәм балалар йорттарын яңы 1951 — 1952 уҡыу йылына өлгөлө итеп әҙерләү тураһында Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәренең Мөрәжәғәтен хуплап ҡаршы алдылар.

Ошо көндәрҙә генә колхозсыларҙан һәм уҡытыусыларҙан 38 кеше урманға барып, 120 кубометр утын киҫеп, мәктәпте уҡыу йылына етерлек ағыулыҡ менән тәьмин иттеләр.

Бында 7 йыллыҡ мәктәп бинаһын ремонт үткәреүҙе 20 июлгә тамамлау өсөн *көрәш бара.*

Г. Ғәйнуллин.

Пропагандистарға һәм агитаторҙарға ярҙамға

Ауыл хужалығының артабан күтәрелеше өсөн социалистик ярыш

Бынан 20 йыл элек иптәш Сталин, үҙенең «Бөйөк һынылыш йылы» тигән атаҡлы хеҙмәтендә былай тип яҙҙы:

«Беҙҙең йәш эре социалистик игенселегебеҙҙең (колхоз һәм совхоз игенселегенең) бөйөк киләсәге бар икәнлеге, уның үҫештә ғәжәп ҙур эштәр күрһәтәсәге асыҡ...» (Әҫәрҙәр, 12 том, 126-сы бит).

Тарих Сталин һүҙҙәренең тәрән дөрөҫлөгөн расланы. Социалистик нигеҙҙәрҙә ойошторолған, социалистик индустрия ҡеүәте менән, кәсле ауыл хужалығы техникаһы менән ҡоралланған колхоздар етештереү көстәренең быға тиклем игенселек тарихы белмәгән үҫеүенә өлгәштеләр.

Колхоз ҡоролошоноң бөйөк көсө һәм тормошсан аралығы 1946—1950 йылдарға СССР-ҙың дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планы үтәлеше йомғаҡтарында асыҡ күренде. Биш йыллыҡ планының уңышлы үтәлеүе арҡаһында илебеҙҙең ауыл хужалығы яңы кәсле күтәрелешкә өлгәште. Биш йыллыҡ йылдарында колхоздарҙың общественный хужалығы үҫте һәм тағы ла нығыны, ауыл хужалығының материаль-техник базаһы кәсәйҙе, колхоз производствоһында машина-трактор станцияларының роле күтәрелде, игенселектә һәм малсылыҡта квалификациялы яңы кадрҙар әҙерләнде.

Социалистик ауыл хужалығының еңеүҙәре, СССР-ҙың бөтә халыҡ хужалығының еңеүҙәре кеүек үк, бөтәһенән элек большевистик партияның сталинса аҡыллы политикаһының һөҙөмтәһе, социалистик ярышты йәйелдереүҙә ғәйәт ҙур энергия һалыусы миллиондарса массаларҙың активлегенең һәм фиҙакәрлегенең, энтузиазм һәм инициатива күрһәтеүҙәренең һөҙөмтәһе булып тора. Был еңеүҙәргә өлгәшеү социалистик хужалыҡ системаһының өҫтөнлөктәре арҡаһында мөмкин булды. Был системала етештереү көстәренең бик шәп үҫеүе өсөн ғәйәт ҙур мөмкинлектәр бар.

Иптәш Сталин социалистик ярыш тураһында Ленин идеяларын алға үҫтереп, ярышты социализм төҙөлешенең коммунистик методы итеп, миллиондарса хеҙмәтсәндәрҙең ижади инициативаһына таянған массаларҙың эшлекле революцион тәнҡитен сағылдырыусы итеп характерланы.

«Ярышта иң күренекле нәмә шунда тора, — тип яҙҙы иптәш Сталин, — ул кешеләрҙең хеҙмәткә ҡараштарында тамырынан алып переворот яһай, сөнки ул элек хурлыҡлы һәм ауыр йөк тип иҫәпләнгән хеҙмәтте намыҫ эшенә, дан эшенә, **батырлыҡ һәм геройлыҡ** эшенә әйләндерә. Капиталистик илдәрҙә быға оҡшашлы бер ни ҙә юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел» (Әҫәрҙәр, 12 том, 315-се бит).

Социалистик ярыш—промышленность, ауыл хужалығы, бөтә социалистик общество үҫешенең әтәргес көсө ул. Колхоз ауылында социалистик ярыштың хәҙерге баҫҡысының характерлы чертаһы булып, уның бөтә халыҡты киң һәм ныҡлы солғап алыуы тора. Ярыш ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарын, бөтә колхозсыларҙы солғап алды. Социалистик ярышта актив ҡатнашыусы совет крәҫтиәндәренең ижади инициативаһы ҙур майҙандарҙа юғары урожайҙарға өлгәшеүгә, общественный малсылыҡты күтәреүгә, колхоздарҙың общественный хужалығын һәр яҡтан үҫтереүгә һәм нығытыуға йүнәлдерелгән.

Һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡ халыҡ инициативаһы көсөнөң бөтә бөйөклөгөн күрһәтте. Биш йыллыҡ планды үтәү өсөн көрәш барышында колхоз ауылы хеҙмәтсәндәре юғары урожайҙар өсөн, ауыл хужалығының яңы өлгәшеүҙәре өсөн социалистик ярышта ғәйәт ҙур тәжрибә тупланылар.

Социалистик ярыштың бөтә халыҡ характерын алыуы ауыл хужалығы работниктарының иптәш Сталинға яҙған хаттарында алынған йөкләмәләрҙә асыҡ күренде. Был хаттар — крәҫтиәндәрҙең һуғыштан һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығын күтәреү өсөн бөйөк көрәшенең тулҡынландырғыс документтары булып тора. Бөтә илдәр хеҙмәтсәндәренең һөйөклө юлбашсыһына һәм уҡытыусыһына йүнәлдерелгән хаттарында колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең ялҡынлы патриотизмын, социалистик игенселекте үҫтереү эшен арымай-талмай алға ебәрергә әҙер тороуын сағылдыралар. Иптәш Сталинға яҙылған хаттарҙа алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәш социалистик ярышты тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа, большевиктар партияһы һәм иптәш Сталин тарафынан ауыл хужалығыбыҙ алдына ҡуйылған яңы ғәйәт ҙур бурыстарға ярашлы баҫҡысҡа күтәрҙе.

Һуғыштан һуңғы осорҙа социалистик ярыштың төп чертаһы булып алдынғыларға тиңләшеү, артта ҡалыусыларҙы алдынғылар кимәленә тиклем күтәреү тора. Юғары урожай өсөн ярышты ойоштороуҙа гүзәл өлгөнө Алтай колхозсылары үҙҙәренең 1947 йылда иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрендә күрһәттеләр. Алтай крайы ауыл хужалығы работниктары ВКП(б) Үҙәк Комитетының тарихи февраль Пленумы ҡарарҙарын бойомға ашыра барып, төрлө райондарҙың, колхоздарҙың һәм совхоздарҙың мөмкинлектәрен иҫәпкә ала торған йөкләмәләрен эшләп сығарҙылар һәм бөтә колхозсыларҙы алдынғыларға, ауыл хужалығы үҫешендәге алдынғы күрһәткестәргә тиңләшергә саҡырҙылар.

Иптәш Сталин былай тип күрһәтә:

«Социалистик ярыш әйтә: берәүҙәр насар эшләйҙәр, икенселәр яҡшы, өсенселәр — тағы ла яҡшыраҡ эшләйҙәр, **яҡшыраҡ эшләүселәрҙе ҡыуып ет һәм дөйөм күтәрелешкә өлгәш»** (Әҫәрҙәр, 12 том, 110-сы бит). Колхоз крәҫтиәндәренең ауыл хужалығында яңы күтәрелеш өсөн көслө ярышы ошо Сталин идеяһы менән һуғарылған.

Алдынғы күрһәткестәргә тиңләшеү меңдәрсә колхоздарға, йөҙҙәрсә райондарға күренекле уңыштарға өлгәшергә мөмкинлек бирҙе. Краснодар крайының Курганинский районында һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың башында колхоздарҙың бары тик бер өлөшөндә генә бөртөклө ашлыҡтарҙың уртаса урожайы гектарҙан 100—120 бот алынғайны. Райондың партия ойошмаһы массаларҙың инициативаһын яҡлап һәм йүнәлдереп, бөтә колхоздарҙы алдынғы күрһәткестәргә өлгәшеү өсөн эшкә тотонорға саҡырҙы. Һәр бер колхозда фән һәм алдынғы тәжрибә өлгәшеүҙәрен производствоға индереү буйынса конкрет саралар эшләнде һәм бойомға ашырылды. Ҙур политик һәм ойоштороу эше арҡаһында партия ойошмаһы райондың бөтә колхоздарында йөҙ бөтөлө урожай алыуҙы тәьмин итте һәм хәҙер массаларҙы яңы ҙур уңыштарға — һәр бер гектарҙан уртаса 120—130 бот бөртөклө ашлыҡ урожайы алыуға алып бара.

Бындай миҫалдарҙы бик күп һанап килтерергә була. 1950 йылда илдең йөҙәрләгән райондары бөтә сәсеү майҙандарында һәр бер гектарҙан йөҙәр бот һәм унан да күберәк иген алдылар.

Социалистик ярыштың йәйелеүендә СССР Верховный Советы Президиумының, юғары урожайҙар алыу өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреү һәм СССР ордендары һәм медалдәре менән наградлау тураһындағы Указдары ғәйәт ҙур роль уйнаны. Был тарихи Указдар массаларҙың ижади энергияһын һәм инициативаһын бөтә ауыл хужалығының күтәрелеше өсөн, бөтә колхозсы массаларҙың, совхоз һәм МТС работниктарының өлгәшеүҙәрен алдынғылар кимәленә еткереү өсөн көрәшкә йүнәлдерәләр. Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл эшсәндәренең социалистик ярышын тап ошо ауыл хужалығының бөтә дөйөм күтәрелеше өсөн көрәш характерлай ҙа. Быға асыҡ шаһит булып — ауыл хужалығы работниктарының юғары урожайҙар алыу һәм малсылыҡтың продукт биреүен арттырыу өсөн наградланыуы тора. 1947—1950 йылдарҙа игенселек һәм малсылыҡтың йөҙҙәрсә һәм меңдәрсә алдынғылары ССР Союзы ордендары һәм медалдәре менән наградландылар. Ауыл хужалығының бер нисә мең мастерҙары Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен алды.

Һуғыштан һуңғы осорҙағы социалистик ярыш барышында ауыл хужалығы новаторҙарының ҙур армияһы үҫеп етеште. Һуғыштан һуңғы осорҙа производство эштәре методтарын тамырынан камиллаштырыу өсөн бер нисә тиҫтә колхозсы һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, совхоз һәм МТС работниктары Сталин премиялары алдылар. Сталин премияһы лауреаттары араһында беҙ радовой комбайнерҙарҙы һәм тракторсыларҙы, сөгөлдөр үҫтереүсе һәм мал тәрбиәләүселәрҙе, баҫыу һаҡлаусы урман станциялары һәм һуғарыу системаһы работниктарын күрәбеҙ.

Кубань комбайнеры Константин Борин комбайнда эшләп сығарыуҙы күтәреүҙең яңы юлдарын һалды. Ул комбайндарҙы файҙаланыуҙа шундай методтар эшләп сығарҙы, ул методтар ике «Сталинец» комбайны тағып, тәүлеккә 120 гектарға тиклем урып, уртаса гектарҙан 20-шәр центнер ашлыҡ һуғып алырға мөмкинлек бирҙе.

Социалистик хеҙмәттең күренекле өлгөләрен Украина ашлыҡ һуғыу машинисы Николай Бредюк күрһәтте. Ул тәҡдим иткән камиллаштырыуҙар молотилканың эшләп сығарыуын биш тапҡыр тип әйтерлек арттырыуға мөмкинлек бирҙе.

Яңылыҡты тойоу — совет кешеһенең ҡиммәтле сифаты. Үзбәк ССР-ының Янгиюль районы Ворошилов исемендәге ауыл хужалығы артеленең члены Назар-Али Ниязов һуғарыу системаһында эшләй. Ул һуғарыу эшендә яңы системаның тағы ла юғарыраҡ урожай алыуҙы тәьмин итеүен, сәсеү майҙандарын киңәйтеүгә, механизмдарҙы тулыраҡ файҙаланыуға мөмкинлек биреүен практикала күрһәтте. Назар-Али Ниязовтың фиҙакәр хеҙмәте Сталин премияһы менән билдәләнде.

Сталин премияһы лауреаттары урожайҙы күтәреүҙә, малсылыҡтың продукт биреүен күтәреүҙә яңы мөмкинлектәр эҙләйҙәр. Ҡазағстан колхозсыһы Ольга Ганжженко агротехниканы камиллаштыра барып, һәр бер гектарҙан 1500 центнер шәкәр сөгөлдөрө алды. Ярославль колхозсыһы Любовь Гунина малсылыҡта күренекле һөҙөмтәләргә өлгәште. Гунина етәкселек иткән колхозда һәр бер һыйырҙан уртаса һөт һауып алыу 5000 литрға еткән.

Сталин премияһы лауреаттарының

Кала Советенең V сессияһы

Ошо көндәрҙә хеҙмәтсәндәр депутаттары Өфө кала Советенең V сессияһы булып үтте. Сессия «Каланың 1951 йылға бюджеты һәм 1950 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында» кала финанс бүлеге мөдире иптәш П. П. Воротынцев докладын тыңланы. [illegible]

[illegible] Каланың 1951 йылға бюджетенең доходтар буйынса 75.008.0 мең һум, расходтар буйынса 73.455.0 мең һум булыуында, йәғни доходтар расходтарға ҡарағанда 1.553 мең һумға арттырып билдәләнгән.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа бөтәһе 8 кеше сығыш яһаны.

— Мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың 100 проценте менән дәрескә өлгәшеүен тәьмин итеү өсөн, — тине депутат Короткова,— уҡыу-уҡытыу өсөн шарттар тыуҙырырға кәрәк.

Иптәш Короткова сессиянан 3-сө номерле мәктәпте нормаль хәлгә килтереү өсөн 250 мең һум аҡса биреүҙе һорай.

[illegible] ғы йөкләмәләрен үтәмәнеләр.

Промкооперация артелдәре һәм инвалидтар кооперациялары 1950 йылда валовой продукция етештереү буйынса ла, тауар продукцияһы буйынса ла планды арттырып үтәп, пландан тыш 3 миллион һум накопление алдылар. Подоходный налогтан бюджетҡа 6 миллион һум аҡса индерҙеләр.

Ләкин был уртаса алынған һандар, — тип дауам итте үҙенең һүҙен иптәш Назаров, — производство һәм финанс буйынса насар күрһәткестәр биргән күп кенә артелдәргә район Советы исполкомдарының иғтибарын йомшартырға тейеш түгелдәр.

[illegible] тарафынан 2045 мең һум бүленгәйне, ә төҙөлөш эштәре ни бары 1110 мең һумлыҡ ҡына башҡарылған.

Водопровод, трамвай юлдарын, дөйөм төҙөүгә ебәрелгән 1100 мең, промышленность предприятиелары буйынса торлаҡ йорттары төҙөүгә ебәрелгән 3 миллион 800 мең һум аҡса файҙаланылмай ҡалды, 10 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны эксплуатацияға бирелмәне.

Кала һәм район Советы исполкомдары торлаҡ һәм культура-тормош төҙөлөштәренең барышында ныҡлы контролде тормошҡа ашырырға тейештәр.

Ағымдағы йылда төҙөлөштәр өсөн ҙур средстволар бүленгән, ләкин уны файҙаланыу ҡәнәғәтләнерлек ойошторолмаған әле. Мәҫәлән, каланы төҙөкләндереүгә һәм культура-тормош төҙөлөштәренә бүленгән 23 миллион 171 мең һум аҡсаның 5 ай эсендә ни бары 3 миллион 800 мең һумы, йәғни 16,5 проценте генә файҙаланылған. Средстволарҙы файҙаланмауҙың төп сәбәбе заказчиктар һәм подрядчиктарҙың билдәләнгән сроктарҙы үтәү өсөн тейешле көрәш ойоштормауҙарында.

Депутат Амосов кала Советы исполкомы тарафынан сессия раҫлауына тапшырылған Өфө ҡалаһының 1951 йылға бюджетында каланы төҙөкләндереү һәм торлаҡ эштәренә ҙур суммалар ҡаралғанлығы, һәм был суммаларҙың бюджетҡа үҙ ваҡытында индерелергә тейешлеге тураһында һөйләне.

Сессияла сығыш яһаусы Устинов, Юнкин, Федин иптәштәр шулай уҡ кала бюджетен үтәүҙә кала һәм район Советы исполкомдарының, финанс органдарының эшендә булған етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләнеләр һәм был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә йүнәлтелгән тәҡдимдәр индерҙеләр.

Сессия Өфө ҡалаһының 1950 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһындағы отчетты һәм 1951 йылғы бюджетте раҫланы.

Район бюджетенең үтәлеше тураһында

Бәләбәй район Советенең нәүбәттәге 3-сө сессияһында 1950 йылда район бюджетенең үтәлеше тураһында мәсьәлә ҡаралды. Был мәсьәлә буйынса район финанс бүлеге мөдире иптәш Ануфриев доклад менән сығыш яһаны.

Бюджеттең доход өлөшө 94,3 процентҡа, *расход өлөшө 96 процентҡа үтәлгән.* Налог агенттарының насар эшләүҙәре арҡаһында подоходный налогтан 535 мең, горторгтың, урындағы промышленностең, кала коммуналь хужалығының, халыҡты көн-күреш яғынан хеҙмәтләндереү мастерскойҙарының насар эшләүҙәре һөҙөмтәһендә тауарға бәйләнешһеҙ операцияларға булған налогтан 32 мең һум аҡса йыйып өткерелмәгән. Ҡала баҙарынан килә торған йыйымдан 75 мең һум аҡса бюджетҡа индерелмәгән.

Сессияла сығып һөйләүселәр район финанс бүлеге работниктарының хеҙмәтсәндәр араһында массовый-аңлатыу эштәре алып бармауҙарын, ауылдарға, колхоздарға барып, налог түләүселәр менән *практик эш итәһе урынға,* кабинеттан ғына «етәкселек» итеүҙәрен ҡаты тәнҡитләнеләр.

Сессия бюджетте үтәүҙә булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә йүнәлтелгән конкрет ҡарар ҡабул итте.

ОКТЯБРЬСКИЙҘӘН ХАТТАР

2. Академик васыяты

«Тип тәрән ныҡлы һәм батыр рыуа [illegible] — тип халыҡ мәҡәле. [illegible] Иван Михайлович Губкин [illegible]

...Октябрьский ҡалаһындағы фәнни-тикшеренеү институттарының [illegible] библиотека бар. [illegible] Был таштарҙа Туймазы нефте табылған урындың тарихы. Уларҙың ҡайһы берҙәре, кешеләргә нефть һәм шатлыҡ, икенселәре — ҡайғы ҡайтыу һәм еңелеү килтергән.

«Таш библиотекаһының» экспонаттарын иғтибар менән ҡарауҙы ике кешенең фекере шул турала булғандыр. Нефть фәнни-тикшеренеү институтының етәксеһе геолог иптәш Николаев, бер ҡаштә эргәһендә туҡтап, һоро, ҡуңыр, алһыу таштарҙы иркә ҡулдары менән һыйпаны һәм йәшерелмәгән ғорурлыҡ менән:

— Беҙҙең библиотекабыҙ ынйыһы, — бында йөҙәнсә буровой керндары, — тине.

Өфөнән килгән ҡунаҡ, инженер-нефтсе Мәғрифә Мауәютова кәштәгә әйәлеп, бур таштарҙы, асыҡ-һоро көм таштарҙы ҡыҙыҡһынып ҡарай башланы һәм, ҡапыл, түйәһе мергелегенең һоро брускаһын ҡулына алып, уйсан:

— Мергель һаман да әле сер, — тине.

Ултырҙашы ризалашып башын ҡаҡты:

— Бында тикшереүсенең белергә тырышыусан аҡылы кәрәк... — тине.

— Губкинса ҡараш, уның ҙартлелеге, арымаусанлығы һәм ныҡышмалылығы кәрәк, — тип дауам итте ҡунаҡ,—уның талантына ғәжәпләнеп бөтә алмайһың. Бындай библиотека булмай торып, бер генә лә тәрән скважина булмай торып, Иван Михайлович бик бай нефтле райондарға разведка үткәреүҙе дөрөҫ билдәләй алды һәм хатта, нефть ятышының дөрөҫ тәрәнлеген күрһәтте...

...«Туймазынефть» тресының баш геологы, Сталин премияһы лауреаты Татарҡан Мағамат улы Залоев кабинетында геологтарҙың киң кәңәшмәһе бара. Озон буйлы, ҡаҡсараҡ, үтә күреүсән ҡара күҙле кеше тулҡынланып һөйләй:

— Башҡортостан нефтенең ғәйәт ҙур перспективаһы бар. Губкин шәкерттәренә совет фәненең уңыштарын күбәйтергә кәрәк. Сөнки беҙҙең эпохабыҙ бөйөк геологы беҙгә яңынан-яңы нефть ятыштарын табырға васыят итте.

Урал нефте тирәһендә оҙаҡ һәм ҡаты көрәш барҙы. Америка һәм Бельгия йыртҡыстары, рус помещиктәре һәм капиталистәре Волга һәм Урал араһында ятҡан нефтле районды разведкалау өсөн *бер нисә тапҡыр маташып ҡараныла*р. Улар араһында иң ҙур активлыҡ күрһәткәне капиталист Нобель ине. Уның агенттары ферма интересын конкуренттарҙан һаҡлау маҡсаты менән башҡорт ерҙәрендә лә йөрөнөләр. «Мин күптән түгел, — тип яҙҙы Иван Михайлович, — 1910—1914 йылдарҙа өлкәнең ҡайһы бер райондары Нобель нефть фермаһының иғтибар үҙәгендә торған объект булғанын белдем... Ферманың вәкилдәре ҡайһы бер райондарҙа йөрөгәндәр һәм ауылдағы крәҫтиән общиналары менән договор төҙөгәндәр. Ауыл обществоһы уның ерҙәрендә нисдәй генә булмаһын геологик һәм тау эштәре үткәреүҙе тыйыу тураһында ҡарар сығара, тип договор төҙөгәндәр. Был ҡарар өсөн Нобель вәкилдәре крәҫтиәндәргә байтаҡ ҡына аҡса түләгәндәр. Күрәһең, ер аҫты байлыҡтары серен асыуҙы булдырмау өсөн түләгәндәр... Нобель Туймазы районына айырыуса иғтибар биргәнен билдәләүе ҡыҙыҡлы. Был урындарҙа хәҙер инде «Туймазынефть» тресы йәшәй».

Башҡортостан нефтенең яҙмышы күп тапҡыр сервә һынауҙар үтте. Ишембай районында инженер А. А. Блохин етәкселегендә махсус экспедиция эшләгән ваҡытта, был экспедицияның инициаторы Иван Михайлович Губкинде профессор К. П. Калицкийҙең реакцион мәктәбе яҡлылар атаковать иттеләр. Улар Урал һәм Волга араһында нефттең барлығын кире ҡаҡтылар. Билдәле бер районды разведкалау тоҡтарланһа, йәки нисдәй генә бер скважина «Коро» булһа, һөжүм көсәйеп китте.

Туймазы нефте табылған урын драматик тарих кисерҙе. Шуға күрә уның ике яҙы булды тип һөйләйҙәр: беренсе тыуыуы 1937 йылда булды. Беренсе фонтан бәреп сыҡты. Ләкин «һай» скважиналар аҙ нефть бирҙеләр. Бораулау шарттары ауыр ине. Башҡортостан нефтенең яҙмышы тағы ла ҡыл өҫтөндә ҡалды. Ләкин алыҫтан күрә белеүсе совет геологтары академик Губкин етәкселегендә был һынауҙар ваҡытында үҙҙәрен ысын большевиктар итеп күрһәттеләр. Иван Михайлович:

— Туймазының киләсәге тәрәндә, девонда, — тине.

Һәм икенсе тыуыу ете йылдан һуң, 1944 йылдың сентябрендә 100-сө номерле буровой девон нефтен биргәс булды. Иптәш Сталиндең гениаль күрһәтмәләре, уның алдан күрә белеүе һәм ярҙам итеүе арҡаһында Совет Россияһының йөрәгендә ғәйәт ҙур нефть районы барлыҡҡа килде.

Фәнни проблемалар рамкаһынан үҫеп сыҡҡан был көрәшкә Иван Михайлович үҙе нисек ҡарауын күҙәтеү ҡыҙыҡлы.

«Мин 1927 йылда Геолкомдың Мәскәү бүлеге директоры инем, — тип яҙҙы ул, — Мәскәүҙә мин (был бүлек функцияһына инмәһә лә) Урал нефтен өйрәнеү буйынса комиссия ойоштороҙом. Бөтә кәмә Урал итәктәрендә нефть һәм күп нефть булырға тейешлеге тураһында һөйләйҙәр.

Ләкин минең һәм иптәштәремдең был проблеманы өйрәнеүгә керешеүе булды, консерватив ғалимдәр, һәм улар иҫәбендә ҡороткостар, әйтеп бирә алмаҫлыҡ шау-шыу күтәрҙеләр: ...Уралда нефть... Был хатта утопия ла түгел! Был Губкиндең Курск тимере кеүек уҡ, нәүбәттәге авантюраһы.

Тормош йәш совет геологик фәненең бөтә нәмәлә лә хаҡлы икәнен күрһәтте. Һәм «Союздың Европа өлөшөндә нефть— кире ҡаға алмаҫлыҡ факт».

Башҡортостан нефтселәре академик васыятын бик яҡшы үҙләштергәндәр. Улар совет ғалиме, рус халҡының улы Иван Михайловичтен ысын күңелдән әйтелгән һүҙҙәрен хәтерләйҙәр. «Мин — ғалим. Минең урын—тормошто алға хәрәкәт иттереүсе партияла. Яҡшы коммунист һәм яҡшы ғалим булыу өсөн ғалим-большевик фән өсөн партияның гениаль линияһы кеүек уҡ көрәшергә тейеш».

Ө. Бикчәнтәев.

Граждандар һуғышы геройы Г. И. Котовскийҙең тыуыуына 24 июндә 70 йыл тулды. Ул халыҡ дошмандары тарафынан 1925 йылда үлтерелде.

Совет хеҙмәтсәндәре халыҡ бәхете өсөн көрәшеүсе, ҡурҡыу белмәҫ был даңлы геройҙы хәтерҙәрендә ныҡ һаҡлайҙар һәм хөрмәтләйҙәр.

Һүрәттә: Г. И. КОТОВСКИЙ.
(ТАСС фотохроникаһы).

БАШҠОРТОСТАН ТАРИХЕ ОЧЕРКТӘРЕНЕҢ ТӘҮГЕ КИТАБЫ

СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалының тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ҡаланың ғилми-тикшеренеү институттары, общественный ойошмалар вәкилдәре ҡатнашлығында киңәйтелгән фәнни кәңәшмә булды.

Был кәңәшмәлә ҡатнашыусылар институт тарафынан әҙерләнгән Башҡортостан тарихе очерктәренең беренсе томының беренсе китабын тикшерҙеләр.

Кәңәшмәнең эшенә СССР фәндәр Академияһы тарих институтының өлкән ғилми сотруднигы Н. В. Устюгов, Молотов университеты доценты А. С. Черевань, Саратов педагогия институты доценты П. Д. Степанов иптәштәр ҡатнашты.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар үҙҙәренең сығыштарында очерктәрҙең уңышлы яҙылыуын күрһәтеп, иптәш Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» хеҙмәте нигеҙендә китаптың культура өлешенә бик ҡиммәтле төҙәтмәләр индерҙеләр. Китап эшләнмәй производствоға бирелһәк.

Пионерҙәр Матросов һәйкәле эргәһендә

Өфө. 23 июндә Матросов исемендәге культура һәм ял паркында, Советтар Союзы Геройы Александр Матросов һәйкәле эргәһендә ҡала пионерҙарының Матросовҡа арналған тантаналы линейкаһы үҙғарылды.

Линейкала һигеҙ йөҙҙән артыҡ пионер ҡатнашты.

Рапорттар биреү тамамланғас митинг булды. Унда Советтар Союзы Геройы Әхмәтов, пионерка Лапшина, хеҙмәт колонияһында тәрбиәләнеүсе Крюков, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған уҡытыусыһы Балакирева, ВЛКСМ-дың ҡала комитеты секретары Сибирцев иптәштәр сығыш яһанылар.

Митингенән һуң пионерҙар өсөн кино һәм концерт булды.

Ғ. Идрисов.

тәжрибәһен дөйөмләштереү, уларҙың өлгәшеүҙәрен бөтә колхоз, совхоз һәм МТС эштәре практикаһына киң индереү — ауыл хужалығыбыҙҙың артабан күтәрелешенең төп сығанағы ул.

Һуғыштан һуңғы осорҙа социалистик ярыштың үҙенлеге, унан һуң, шунда тора: ул игенселек культураһының туҡтауһыҙ күтәрелешенә таяна. Партияның һәм Совет государствоһының етәкселек һәм ойоштороу эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә социалистик игенселектең етештереү көстәре йылдам үҫә, улар ауыл хужалығы продукттарының муллығын булдырыуға һәләтле, ә был инде илебеҙҙең социализмдан коммунизмға күсеүендә мөһим шарт булып тора.

Ауыл хужалығы работниктарының иптәш Сталинға яҙған хаттары тап ошо уй менән, игенселектә иң яңы техника һәм яҡшы эшләү нигеҙендә муллыҡ өсөн көрәштең ошо идеяһы менән һуғарылған.

Күптән түгел Украина колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС работниктары һәм ауыл хужалығы специалистары иптәш Сталинға хат менән мөрәжәғәт иттеләр. Украинаның ауыл эшсәндәре, үҙҙәренең Тыуған ил алдындағы патриотик бурыстарын аңлап, ауыл хужалығы өлкәһендәге төп бурысты — урожайҙы байтаҡ күтәреү, общественный малдар һанын тиҙерәк арттырыу һәм бер үк ваҡытта уның продукт биреүен үҫтереү бурысын хәл итеү өсөн ҙур рухланыу менән көрәшәләр.

Шул түбәл фактты ныҡ итеп әйтеп үтергә кәрәк, Украина ауыл хужалығы работниктарының хаты, өлкәләрҙең йөкләмәләрен сағылдырыу менән генә ҡалмай, бәлки ул күп районларҙың, колхоз бригадаларының һәм звеноларының йөкләмәләрен дә сағылдыра. Йөкләмәләрҙең конкрет булыуы ярышҡа йөкөмтөлө һәм массатҡа йүнәлешле характер бирә, Украина колхозсыларының йөкләмәләре республиканың ауыл хужалығы үҫешенең ғәйәт бай мөмкинлектәрен һәм перспективаларын сағылдыра. Киев өлкәһе көҙгө бойҙайҙың гектарынан уртаса 134 бот урожай йыйып алырға йөкләмә алды. Сталин өлкәһе колхоздары бер гектарҙа — 128 бот көҙгө бойҙай үҫтерергә, Одесса өлкәһе колхоздары — 125-әр бот, Днепропетровск өлкәһе колхоздары 122-шәр бот бойҙай урожайы алырға булдылар. Украинаның бөтә 25 өлкәһендә көҙгө бойҙайҙың гектарынан уртаса 100-әр бот һәм унан күберәк урожай алырға йөкләмә алдылар.

Ошо йылдың апрелендә Азербайжан ауыл хужалығы работниктары иптәш Сталинға ебәргән хаттарында былай тип яҙҙылар:

«Беҙ Азербайжан колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС, совхоз, һуғарыу системаһы работниктары һәм ауыл хужалығы специалистары 1951 йылды ҙур майҙандарҙа һәм республиканың бөтә колхоз һәм совхоздарында мамыҡ һәм бойҙайҙың рекордлы урожайын алыу йылы итеп иғлан итабеҙ. Беҙ, колхоздарҙың ауыл хужалығы производствоһының бөтә тармаҡтарында һәм бигерәк тә малсылыҡта ҡырҡа күтәрелешкә өлгәшербеҙ. Үҙ Тыуған илебеҙ алдында яуаплылыҡты аңлаған хәлдә, беҙ һеҙгә, иптәш Сталин, 1951 йылда юғары урожай үҫтереүгә һәм государствоға 1950 йылға ҡарағанда, 60—70 мең тоннаға күберәк эшкәртелмәгән мамыҡ бирергә һүҙ бирабеҙ».

Алдынғы биология фәненә һәм ауыл хужалығы алдынғыларының тәжрибәләренә таянып, күп һәм бик күп колхоздар һәм хатта райондары быйыл бөтә сәсеү майҙандарында, һуғыштан элек бары тик алдынғы бригадалар һәм социалистик игенселектең мастерҙары ғына ала алған юғары урожай алыуҙы тәьмин итергә йөкләмә алдылар. Мәҫәлән, Киев өлкәһе Шполянский районы колхозсылары быйыл 10.7 мең гектар майҙанда көҙгө бойҙайҙың һәр бер гектарынан 210-ар бот урожай алырға; Умань районы Молотов исемендәге ауыл хужалығы артеле колхозсылары 315 гектар майҙанда һәр бер гектарҙан 232-шәр бот урожай алырға; Одесса өлкәһе Любашевский районы «Биш йыллыҡты дүрт йылда» ауыл хужалығы артеле колхозсылары 600 гектар майҙанда һәр гектарҙан 193-әр бот алырға; Сыуаш АССР-ы Вурнар районы Сталин исемендәге ауыл хужалығы артеле колхозсылары бөтә сәсеү майҙанында һәр бер гектарҙан уртаса 35-әр центнер йәки 210-ар бот урожай алырға бер күңелдән йөкләмә алдылар. Бындай миҫалдарҙы бик күп килтерергә мөмкин.

Краснодар крайы Михайлов МТС-ы трактор бригадаһы бригадиры Иван Шапкий инициативаһы менән башланған баҫыу эштәренең бик яҡшы сифаты өсөн хәрәкәт ауыл хужалығы работниктарының ярышын байытыусы мөһим вклад булып тора. Билдәле булыуынса, ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы МТС-тарҙың төп бурысы булып, хеҙмәтләндергән колхоздарҙа урожайҙы күтәреү тора, тип билдәләне. МТС эшенең сифатын урожай һәм урожай ғына билдәләй ала. Шуға күрә лә Иван Шапкий тарафынан башланған баҫыу эштәренең бик яҡшы сифаты өсөн хәрәкәт ауыл хужалығы механизаторҙарының бик мөһим хәрәкәте булып тора.

Хәҙерге шарттарҙа, ауыл хужалығы культураларын эшкәртеү буйынса төп эштәр механизациялаштырылған бер ваҡытта, колхоз һәм совхоз производствоһының үҫешендәге артабанғы уңыштар күп кенә дәрәжәлә трактор паркын файҙаланыуға бәйләнгән. Шуға күрә комбайндарҙың, тракторҙарҙың һәм башҡа ауыл хужалығы машиналарының юғары етештереүсәнлеге өсөн көрәштең ғәйәт ҙур государство әһәмиәте бар. Быны совет ауылының алдынғы кешеләре яҡшы аңлайҙар. Кубань трактористы Иван Бунеев инициативаһы буйынса илебеҙҙә механизаторҙарҙың техниканы бик яҡшы файҙаланыу өсөн, колхоздарҙағы, совхоз һәм МТС-тарҙағы бөтә резервтарҙы асыу һәм киң мобилизациялау өсөн ярыш башланды. Иван Бунеев бригадаһының трактористары, үткән йыл менән сағыштырғанда, һәр бер тракторға эшләп сығарыуҙы 20 процентҡа арттырырға, трактор эштәренең үҙенә төшәү хаҡын кәметергә йөкләмә алдылар. Улар сәғәт графигын индерергә, машиналарға ентекле техник ҡарау ойоштороға, тракторҙарҙың тик тороуҙарын бөтөрергә һәм һәр бер тракторҙың буразнала тәүлеккә кәмендә 22 сәғәт эшләүенә өлгәшергә булдылар.

Иван Бунеев саҡырыуы илебеҙҙең бөтә райондарына таралды. Социалистик ярышта ун меңләгән трактор бригадалары, йөҙәрсә мең трактористар ҡушылдылар. Яҙғы сәсеү көндәрендә был ярыш бай емештәр килтерҙе. Мәҫәлән, Иван Бунеев эшләгән Малороссийский МТС-ында яҙғы сәсеү осоронда бер тракторға уртаса эшләргә 25 процентҡа күтәрелде.

Ярыш барышында техниканы оҫта файҙаланыу өсөн МТС-тарҙың алдынғы тәжрибәһен индереүҙең һәм пропагандалауҙың, трактористар араһында үҙ-ара иптәштәргә ярҙамлыҡ эффектле формалары табылды. Айырыуса ауыл хужалығы алдынғы механизаторҙарының тәжрибәһе өйрәнелә торған семинарҙар үткәреү практикаһы иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә. Ҡайтатә семинарҙар трактор бригадаларында йәки машина-трактор станцияларында үткәрелә. Семинарға бөтә трактористар саҡырыла. Эшендә яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән яҡшы тракторист доклад менән сыға. Уның хеҙмәт методтарын бригадир йәки механик дөйөмләштерә, унан һуң тракторист теге йәки был эш алымдарын ҡулланырға кәрәклеген күрһәтә. Шундай производство өйрәнеүе трактористарҙың квалификацияһын күтәреүгә булышлыҡ итә, бөтә механизаторҙарҙың стахановсы эшенең нигеҙҙәрен үҙләштерергә ярҙам итә. Производство семинарҙары регуляр рәүештә үткәрелә торған, СССР Верховный Советы депутаты И. П. Шацкий трактор бригадаһында бөтә трактористар ҡыҫҡа срок эсендә стахановсы булып әүерелделәр.

Механизаторҙарҙың социалистик ярышында яңы нәмә булып, машина-трактор станцияларының эшендә коллектив рәүештә стахановсылыҡ өсөн көрәш тора. Күптән түгел Куйбышев өлкәһенең Кулешовский МТС-ы коллективы үҙенең МТС-ын стахановсы эштең коллектив методтары станцияһы, тип иғлан итте. Был ҡарар нигеҙендә тәрән мәғәнә һалынған. Хәҙер МТС-тар үҫкән һәм ныҡыған бер саҡта, партияның тырышлыҡтары арҡаһында гүзәл механизаторҙар ҡадры үҫкән, машина-трактор станциялары камиллашҡан яңы совет техникаһы менән байытылған саҡта, һәр бер МТС-тың стахановсы эше өсөн яҡшы шарттар тыуҙырылды.

Колхоздарҙың эреләтелеүе — колхоз ҡоролошоноң артабан сәскә атыу юлында яңы мөһим аҙым булып тора. Ваҡ артелдәрҙең тағы ла эре артелдәргә берләшеүе үҙәк һәм төп бурысты — **бөтә ауыл хужалығы культураларынан юғары урожай алыу, общественный малсылыҡтың һанын тиҙерәк үҫтереү һәм бер үк саҡытта, уның продукт биреүен байтаҡ күтәреү** бурысын үтәү өсөн социалистик ярышты яҡшыраҡ ойоштороуға ярҙам итә.

Был бурыс колхоз ауылдарында социалистик ярыштың яңы күтәрелеше өсөн нигеҙ булып тора. Колхоз крәҫтиәндәренең, совхоз һәм МТС работниктарының инициативаһы, энергияһы, хеҙмәт батырлығы бөгөнгө көндә ауыл хужалығы үҫешенең иң мөһим мәсьәләләрен хәл итеүгә йүнәлдерелгән. Колхоздарҙың средстволарын, колхозсыларҙың хеҙмәтен беренсе нәүбәттә общественный хужалыҡты үҫтереүгә, мал торлаҡтары төҙөүгә, һуғарыу һәм киптереү каналдары, һыу ятҡылыҡтары төҙөүгә, ерҙәрҙе ҡыуаҡлыҡтарҙан таҙартыуға, баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыуға, колхоз биналары, колхоз электр станциялары төҙөүгә йүнәлдерергә кәрәк.

Колхоздарҙың общественный хужалығын ныҡытыу — социалистик ауыл хужалығының яңы күтәрелешенә, совет крәҫтиәндәренең материаль хәлен күтәреүгә, илебеҙҙә ауыл хужалығы продукттарының муллығына өлгәшеү юлы ул.

Колхоз ауылы эшсәндәренең, совхоз һәм МТС работниктарының һуғыштан һуңғы осорҙағы социалистик ярышы массаларҙың ижади энергияһын социалистик игенселектең һәм малсылыҡтың иң мөһим мәсьәләләрен хәл итеү өсөн мобилизациялау булып тора.

Хәҙер, беҙҙең Тыуған илебеҙ большевиктар партияһы етәкселегендә, иптәш Сталин юлбашсылығында коммунизмдың техник базаһын булдырыу эштәрен киң фронт менән йәйелдергән бер саҡта ауылда социалистик ярыш яңы юғарылыҡҡа күтәрелергә тейеш.

Социалистик ауыл хужалығы эшсәндәре, социалистик ярышта ҡатнашып, сәсеүлектәрҙе үҙ ваҡытында тәрбиәләү өсөн, общественный малсылыҡҡа ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн, урожай йыйыу кампанияһына әҙерләнеү һәм уны бик яҡшы үткәреү өсөн фиҙакәр көрәшеп, илебеҙҙә коммунизм төҙөү эшенә үҙҙәренең ҡиммәтле өлөшөн индерәләр.

В. Поляков.

Һалдат һүҙе

Күптән түгел мин Сталин исемендәге колхозда булырға тура килде. Был — Зианчурин районының иң ҙур колхозы. [illegible]

[illegible]

Гитлер Германияһының беҙҙең Тыуған илебеҙгә мәкерле һөжүм башлауына 10 йыл тулып үтте. [illegible]

[illegible]

Был — һалдат һүҙе.

Әнүәр Ғафури.

ИЛЕШ РАЙОНЫНДА

Яңы кинотеатр

Район үҙәге Йәркәй ауылы йыл һайын матурлана һәм яңы төҙөлештәр арта бара. Бында, үткән йыл ғына яңы культура йорто төҙөлөп бөттө һәм быйыл кинотеатр өсөн яңы клуб төҙөлөп, эксплуатацияға бирелде. Уның тамаша залына 250 кеше һыя. Хәҙер районда 2 стационар һәм 6 күсмә кино эшләй.

Китаптар һаны арта

Районда 60 ауыл һәм колхоз клубтары, 17 уҡыу өйө, 1 район һәм 5 ауыл библиотекаһы эшләп килә. Был культура учреждениеларында китаптар һаны йылдан-йыл арта бара. Хәҙер Ҡарабаш, Ҡәҙер, Манчар, Рсай, Яңы Айыу ауыл Советтәре эргәһендәге уҡыу йорттарының һәм клубтарҙың бер меңдән алып ике мең ярымға тиклем китап фондтары бар.

Район үҙәгендәге библиотеканың китап фонды 10 мең данаға етте. Библиотекала балалар өсөн махсус бүлек асылды. Уның китаптар фонды 1 меңдән артыҡ тәшкил итә. Район библиотекаларындағы китаптар һаны 36 мең 855-тән артып китә.

„Колхозсы" иркле спорт обществоһы

«Колхозсы» иркле спорт обществоһының район конференцияһы ойоштороу мәсьәләләрен ҡарап, 15 кеше составында обществоның район советен һәм 5 кеше составында ревизия комиссияһын һайлап үтте. «Колхозсы» иркле спорт обществоһының район советы председателе итеп ауыр атлетика буйынса район чемпионы иптәш Маннапов һайланды.

Хәҙер «Урал», «Коммунар», Хрущев исемендәге — барлығы 22 колхозда «Колхозсы» иркле спорт обществолары ойошторолдо. Уларҙа бөтәһе 1027 кеше юридик член булып тора.

Колхоздың малсылыҡ фермаһы механизациялаштырыла

Маленков исемендәге эрләтелгән колхоз малсылыҡты үҫтереүҙең государство планын бөтә төр малдар буйынса ла үтәне. Малсылыҡ работниктәре малдарҙың продукт биреүсәнлеген күтәреү буйынса ла эшлекле саралар күрәләр. Быны уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн колхоз малсылыҡ фермаларына механизация көсөн индерә башланы. Һарыҡтарҙың йөнөн ҡырҡыу электр ярҙамында үткәрелә. Шулай уҡ һыйыр һауыу ҙа электр көсө менән башҡарыла.

Ҙур отоштар

Район һаҡлыҡ кассаһы ошо йылдың ике айы эсендә генә государство заемдары облигациялары тотоусы хеҙмәтсәндәргә 180 мең һум отош аҡсаһы түләне. Улар араһында 25 мең һумлыҡ бер, 10 мең һәм берәр мең һумлыҡ 12 отош бар.

Х. Ғәлимов.

Республика МТС-тарында комбайндар ремонтлауҙың барышы

(План үтәлеше, 1951 йылдың 20 июненә, процентттарҙа)

Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған
1	Шаранбаш-кнәз	170	47	Хоҙайбирҙин	72	94	Дыуан	60
2	Октябрьский	119	48	Маҡар	71	95	Полянск	60
3	Сынташтамаҡ	112	49	Әбдрәшит	71	96	Бишбүләк	60
4	Полгорный	111	50	Ҡалмыҡ	71	97	Ҡандра	60
5	Благовар	106	51	Һүрән	71	98	Бүрлы	59
6	Дәүләкән	100	52	Божор	70	99	Һуҡайлы	59
7	Ҡарамалы Ғөбәй	100	53	Языково	70	100	Таутөмән	59
8	Борай	100	54	Миәкә	70	101	Мрәсем	58
9	Йәркәй	100	55	Калинников	70	102	Арҡауыл	58
10	Ямалы	100	56	Байыш	70	103	Үслы	58
11	Баймаҡ	100	57	Андреевка	70	104	Ҡариҙел	57
12	Йылайыр	100	58	Ҡалтасы	70	105	Йәрмәкәй	57
13	Янауыл	94	59	Моторный	70	106	Приют	57
14	Әбдрәәҡ	93	60	Нуриман	69	107	Хәйбулла	57
15	Бишенде	90	61	Красноколм	69	108	Байҡы	56
16	Ҡарлыман	89	62	Саҡмағош	69	109	Ташлы күл	56
17	Стәпәновка	89	63	Тәтешле	68	110	Күҙәй	56
18	Иглин	89	64	Аслыкүл	68	111	Орловка	56
19	Ишле	87	65	Шланлы	67	112	Кәсәү	56
20	Өйәҙе	85	66	Таймас	67	113	Кушнаренко	56
21	Рәжәп	82	67	Чапаев	67	114	Дмитриевка	56
22	Емаш	81	68	Степной	67	115	Покровка	55
23	Арслан	81	69	Ҡаран	67	116	Ерғән	55
24	Байғужа	81	70	Әбйәлил	67	117	Шишмә	55
25	Аит	80	71	Сибай	67	118	Әлмөхәмәт	55
26	Һуҡкүл	80	72	Абҙан	67	119	Ҡарыш	53
27	Теләкәй	79	73	Матрай	67	120	Болваҡ	53
28	Ташлы	78	74	Һаҡмар	67	121	Балтач	52
29	Суйынсы	78	75	Белоҡатай	66	122	Елдәр	52
30	Дүрәс	78	76	Күрҙем	66	123	Мәсетле	50
31	Мрәк	78	77	Ермолаевка	66	124	Пугачев	50
32	Күндрәк	77	78	Дүртөйлө	66	125	Бүздәк	50
33	Йәнбирет	77	79	Чурай	66	126	Ерекле	50
34	Базан	76	80	Петровск	65	127	Стәрлебаш	48
35	Федоровка	76	81	Ҡуш-йылға	65	128	Мишкә	48
36	Ҡорос	75	82	Ярослав	64	129	Подлуб	46
37	Михайловка	74	83	Ҡырмыҫҡалы	64	130	Архангель	45
38	Бәрә	74	84	Имәнле күл	64	131	Охлебинин	45
39	Мәсәғүт	73	85	Туймазы	63	132	Малояз	44
40	Үләй	73	86	Стәрлетамаҡ	62	133	Янғыҙ ҡайын	43
41	Шәрип	73	87	Туҡмаҡлы	62	134	Мәләүез	42
42	Асҡын	72	88	Сәрмән	62	135	Байрамғол	41
43	Ҡыйғы	72	89	Һары күл	62	136	Бәләбәй	40
44	Аксен	72	90	Усть-Икин	61	137	Забельск	39
45	Баҡалы	72	91	Шаран	61	138	Оло Теләк	36
46	Ново-Троицк	72	92	Күгәрсен	61	139	Усень-Ивановка	33
			93	Үрмиәз	60	140	Учалы	25

* * *

Башҡортостан шарттарында июль айында урожай йыйыу эштәре башлана. Уға инде күп ваҡыт ҡалманы. Бөтә комбайндар һәм башҡа урожай йыйыу машиналары 1 июлгә тиклем ремонтланып бөтерелергә һәм тулы әҙерлек хәленә килтерелергә тейештәр.

Республика МТС-тарында һуңғы ун көнлектә лә (10 июндән алып 20 июнгә тиклем) ремонттың барышы ҡәнәғәтләнерлек булманы. Был ун көнлектә Шаранбаш-Кнәз, Борай, Йәркәй, Баймаҡ һәм Йылайыр МТС-тары ғына ремонт планын теүәлләнеләр. Шулай итеп, республикала әле 128 МТС комбайндарҙы әҙерләүҙе тамамламаған. Был эштә бигерәк тә Учалы, Ҡариҙел һәм башҡа МТС-тар артта ҡалалар. Оло Теләк МТС-ы кеүек, ҡайһы бер МТС-тар һуңғы ун көнлектә бер генә комбайнды ла ремонттан сығарманылар.

Темптың түбән булыуы һаман да ремонтта производствоның һәм хеҙмәттең тейешенсә ойошторолмауында тора. Күпселек МТС-тарҙа хеҙмәттең прогрессив методтары ҡулланылмай. Шул арҡала бындай МТС-тар графикте һәр биш көнлектә эҙәләр. Ремонттағы хәҙерге темптың барышы МТС-тарҙың үҙ ваҡытында урожай йыйыуға әҙерләнеүен тәьмин итә алмау тревогаһын тыуҙыра

Хәҙер ремонтта һәр бер көн, һәр бер сәғәт ҡиммәт. МТС етәкселәренең бөтә иғтибары, МТС коллективтәренең бөтә көсө комбайндарҙы йылдам һәм сифатлы ремонтлауҙы тәьмин итеүгә туплапырға тейеш. МТС-тарҙың урожай йыйыуға тулы әҙерлеген тәьмин итеү — механизаторҙарҙың бөгөнгө төп бурысы ул.

МТС ярҙамында

Иглин районының «Париж коммунаһы» колхозында общественный малсылыҡ өсөн 200 тонна, Чкалов исемендәге колхозда 150 тонна силос һалынды. Был эштә колхоздарға МТС ярҙам итә.

Ғ. Ғәйнуллин.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 22 июнь. (ТАСС). К... Халыҡ-Демократик Республикаһының Х... армияһы баш командованиеһе бөтә ... фронттарҙа ла Корея Халыҡ армияһы... частәре, Ҡытай добровольцтәре отря... менән бергә, тығыҙ хәрәкәт итеп, Ам... ка-Англия интервенттәренә һәм Ли С... Ман армияһына ҡаршы уңышлы һуғ... тар алып баралар, тип хәбәр итте.

21 июндә төндә Халыҡ армияһын... төнгө бомбардировка авиацияһы сам... тары Сеул—Генсан тимер юл стан... һын бомбаға тотҡандар. Бомбардиро... һөҙөмтәһендә көслө шартлауҙар ... янғындар булған.

21 июндә Халыҡ армияһының авиа... һы һауалағы һуғыштарҙа дошман... ғүрт «Сейбр Ф—86» һәм бер «Мус... Ф—51» истребителен бәреп төшер... шулай уҡ дошмандың бер нисә сам... тын зарарлаған.

22 июндә дошман самолеттарын ст... теүсе уҡсылар дошмандың 3 самол... бәреп төшерҙеләр.

Тегеранда 30 мең кеше ҡатнашлығында митинг

Нефть промышленносен элекке Англия-Иран нефть компанияһы ҡарамағынан тиҙерәк алыуҙы талап итеү

ТЕГЕРАН, 22 июнь. (ТАСС). Тег... халҡы Иран нефть промышленносе... ционализациялау тураһындағы зак... практик тормошҡа ашырыуға ... хөкүмәттең һуңғы ҡарарын ҡәнәғәт... менән ҡабул итте.

Элекке Англия-Иран нефть ко... нияһы конторәһы биналары өҫтөнә ... Ирандың милли флагтары күтәрелгә... Англия-Иран нефть компанияһы... вывескалары «Иран милли нефть ко... нияһының» ваҡытлы правлениеһе ... вескалары менән алыштырылғандар.

Ирандың провинциональ ҡалалары... уларҙа хөкүмәттең күрһәтмәһенә яр... рәүештә шулай уҡ элекке Англия-Ир... нефть компанияһы вывескаларын ... эмблемаларын алыштырыу бара, тип ... бәр итәләр.

ТЕГЕРАН, 22 июнь. (ТАСС). Кис... Тегеранда Бахарстан майҙанында ... бинаһы алдында митинг булған. Уны ... меңгә яҡын кеше ҡатнашты. Митинг... сығыш яһаусы ораторҙар элекке ... глия-Иран нефть компанияһы ... цияһы тарафынан Иран хөкүмәте ... һөйләшеүҙәргә тотолған позиция ту... һында нәфрәтләнеү менән һөйләгәндә... Англияның сит ил эштәре министр... Моррисондың белдереүҙәренә ҡаршы п... тест белдергәндәр, (Моррисондың б... белдереүҙәрендә Иранға ҡарата яһыр... юл ҡуйылған) һәм нефть промышл... носен национализациялау тураһында... законды тулыһынса тормошҡа ашыр... ҙы, нефть промышленносе предприяти... рен элекке Англия-Иран нефть ком... нияһы ҡулынан тиҙерәк алыуҙы һ... уны Ирандан ебәреүҙе талап иткән...

— Иран халҡы, — тип әйтелә ми... гелә ҡабул ителгән резолюцияла, — ... глия-Иран нефть компанияһы пр... приятиеларын национализациялау һәм ти... Иранға тулыһынса тапшырыу тураһы... ҙағы законды тормошҡа ашырыуға ... та Мосаддык хөкүмәтенең ҡарарын ... лай.

Тимер юлсылар клубтарында

Өфө тимер юл эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре клубтар һәм ҡыҙыл мөйөштәр эргәһендәге художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәренә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән йөрөйҙәр. Дим, Раевка, Абдуллино, Бегелма станцияларының клубтарында, Норлат, Чуфарово һәм башҡа станцияларҙың ҡыҙыл мөйөштәрендә үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәре айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Дим паровоздар депоһының йәштәре халыҡ инструменттәре оркестре ойошторҙолар. Улар хәҙер йыш ҡына концерттәрҙә ҡатнашалар.

Күптән түгел Норлат һәм Дим станцияларының художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәре тарафынан күрһәтелгән концерт тамашасыларҙа яҡшы тәьҫир ҡалдырҙы.

Хәҙер Абдуллино һәм Норлат станцияларының коллективтәре «Балан әрәмәлеге», «Серле котелок» тигән пьесалар һәм концерт номерҙәре әҙерләйҙәр.

Д. Егоров.

Халыҡ-ара күҙәтеү

Францияның халыҡ собраниеһенә һайлауҙар

17 июндә Францияның милли собраниеһенә үткәрелгән һайлауҙар үҙған аҙналә иң ҙур ваҡиға булып торалар.

Америка империалистәре был һайлауҙарға ҙур әһәмиәт бирҙеләр. Улар, француз һайлаусыларын ҡурҡытыу обстановкаһында үткәрелән һайлауҙар тыныслыҡ өсөн һәм илдең милли азатлығы өсөн сығыш яһаусы Франция коммунистәр партияһының йоғонтоһон йомшартыуға килтерер, тип иҫәп тоттолар. Америка күрһәтеүе буйынса, мошенниктәрсә төҙөлгән һайлау законы ла ошо уҡ маҡсатҡа хеҙмәт итте. Америка һәм Франция реакцияһының пропаганда машинаһы тарафынан яуҙырылған советҡа ҡаршы ҡырағай яла ягыу ошоға уҡ йүнәлдерелгәйне.

Һайлауҙар йомғағы был иҫәптәрҙең емерелеүгә осрағанлығын күрһәтте. Һайлауҙарҙа республика һәм ҡаршылыҡ күрһәтеүҙең антифашистик союзы байрағы аҫтында сығыш яһаған коммунистәр партияһы 5 миллиондан да артығыраҡ тауыш алды. Ул Францияның иң ҙур политик партияһы хәлендә булыуын һаҡлап алып ҡалды. Һәр бер дүрт һайлаусының береһе коммунистәр өсөн тауыш бирҙе.

Парламентта коммунистик фракцияны бәләкәй, бер нисә генә депутаттан торған әһәмиәтһеҙ бер группаға әйләндереү тураһында Америка планы өҙөлдө. Алдашыуға нигеҙләнгән һайлау системаһына ҡарамаҫтан, күп кенә департаменттәрҙә үҙгә ҡарағанда компартия исемлектәре ҙур күпселек алыуға ҡарамаҫтан, бер генә коммунист тә һайланып тип танылмауға ҡарамаҫтан, милли собраниела коммунистик фракцияның 105 депутаты бар. Коммунистәрҙең авторитеты һәм йоғонтоһо тағы ла нығыраҡ үҫә барҙы.

Францияла һайлауҙар йомғағы менән Америка һуғыш уты тоҡандырыусыларҙың кәйефтәре ҡырылыуҙарын океан арты матбуғатының отделтәре асыҡ раҫлайҙар. «Нью-Йорк таймс» һәм «Нью-Йорк геральд трибюн» газеталары коммунистәрҙең ошондай күп тауыш алыуҙары айҡанлы ҡайғы белдерәләр. «Коммунистар үҙҙәренең етерлек тиклем халыҡтың яҡлауы менән файҙаланғанлыҡтарын тағы бер тапҡыр демонстрацияланылар» тип күңелһеҙ генә билдәләй «Нью-Йорк уорлд телеграмм энд сан» газетаһы.

Хәҙер Францияның бөтә буржуаз партияларының вәкилдәре йәшерен һөйләшеүҙәр алып баралар, был һөйләшеүҙәрҙә де Голль менән блок төҙөү тураһында һүҙ булыуы бик ихтимал. Мәсәлән, элекке премьер Плевен буласаҡ хөкүмәт составының «ес вариантын» халыҡҡа еткерергә ашыҡты, шул уҡ ваҡытта ошо ес комбинацияның икеһе РПФ партияһын, де Голль партияһын ылыҡтырыуҙы күҙҙә тота. Был генерал тарафынан асыҡ итеп иғлан ителгән демократик институттарҙы бөтөрөү, профсоюздарҙы һәм партияларҙы таратыу программаһы, Францияны мелитаризациялау һәм фашислаштереү программаһы республика ҡоролошон «яҡлаусыларҙы» ла ғына ла борсомай.

Хәҙер бөтә ошондай комбинацияларға уңайлы шарттар тыуҙырыусы обстановкаһың барлыҡҡа килеүенә Францияның уң социалистәре төп ғәйепле кешеләр булып торалар. Һүҙҙә де Голлдең планына ҡаршы килгән булып, уң социалистәр советҡа һәм коммунистәргә ҡаршы үҙҙәренең яуыз пропагандалары менән, Американың агрессив тышҡы политикаһын үҙҙәренең яҡлауҙары менән де Голлгә власҡа килеү өсөн юл һалалар. Германияла Гитлерҙең власҡа килеүе тураһындағы билдәле тарих яңы обстановкала ҡабатлана, ул ваҡытта ла Германияның уң социал-демократтары үҙҙәренең хыянат итеүҙәре менән фашизмдең урынлашыуына ярҙам иттеләр.

Оятһыҙ фальсификация һәм алдашыу шарттарында үткәрелгән һайлауҙарҙың йомғаҡтарына анализ яһап, Франция коммунистәр партияһы былай тип белдерҙе: «Милли собраниела үҙенең ғәҙел вәкиллегенән мәхрүм ителгән ошо шарттарҙа эшселәр синыфы һәм демократик көстәр парламент эшмәкәрлеген тулыландырыуҙы булдыра аласаҡтар...».

Француз халҡы тыныслыҡ өсөн, милли азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ өсөн яңы бөтә донъя һуғышын әҙерләүҙә Америка политикаһына ҡаршы көрәште дауам итерә.

Көнбайыш Германияны ремилитаризациялау

Францияла һәм Италияла һайлау кампанияһы үткәрелгән ваҡытта был илдәрҙең общественный фекерен алдарға маташып АҠШ-тың идара итеүсе түңәрәктәре үҙҙәренең ҡайһы бер агрессив сараларын тормошҡа ашырыуҙы мәскәү йәшерҙеләр. Былар иҫәбенә бөтәһенән дә элек «вермахт» — Германияның ҡоралды көстәрен тергеҙеү тураһында Америка программаһы инә. Быға Франция хөкүмәтенән йәшерен рәүештә уның ризалығы алынды, француз хөкүмәте бынды бер генә шартты: «Көнбайыш Германия армияһын төҙөү тураһындағы ҡарарҙы 17 июндәге һайлауҙарға тиклем «кешеләргә белдермәскә» тигән шартты ғына ҡуйҙы.

АҠШ-тың штаб начальниктәре группаһы етәксеһе Брэдли Европанан сәйәхәттән ҡайтып Көнбайыш Германияны ремилитаризациялау яңынан «бик актуаль мәсьәлә булып әүерелде» һәм Францияла һайлауҙар үткәндән һуң был мәсьәлә «хәл иткес фазаға инә» тип белдергән. Шулай итеп империалистәр хәҙер үҙҙәренең ҡулдарын азат, тип иҫәплайҙәр. Италияның «Аванти» газетаһы хәбәр итеүенә ҡарағанда, агрессив Төньяҡ атлантик союзының хәрби етәкселәре Көнбайыш Германияла һәр төрлө авиация соединениеларын иҫәпкә индермәйенсә, 12 моторизировать ителгән пехота дивизияһы, 5 танковый дивизия һәм 3 артиллерия дивизияһы төҙөргә ҡарар иткәндәр.

Францияла һайлауҙарҙан һуң ике көн үткәс, 19 июндә Парижда Атлантик союздың ҡоралды көстәре штабтары начальниктәренең кәңәшмәһе асылды. Кәңәшмәнең көн тәртибендә, атап әйткәндә, Көнбайыш Германияны ҡайтадан ҡоралландырыу мәсьәләһе тора. Ошо уҡ көндәрҙә Американың Германиялағы верховный комиссары Макклой Вашингтонға «доклад» менән ҡайтып, «федераль республика менән (йәғни марионетик Бонн хөкүмәте менән) көнбайыш араһында яңы мөнәсәбәттәр тураһында», Көнбайыш державаларҙың теләктәре тураһында официаль белдереү яһаған.

Көнбайыш Германияны ремилитаризациялау эше, фактик алғанда, төрәнгә инде. Ул бер уҡ ваҡытта, Көнбайыш Германияның тыныслыҡ өсөн продукция етештереүсе промышленносен ябып, хәрби промышленность тармаҡтарын АҠШ тарафынан субсидировать итеүҙә һәм дәртләндереүҙә үҙенең кәүҙәләнешен тапты. Ул унан ары «Шуман планы», тип аталған планды ҡабул итеүҙә кәүҙәләнеш тапты, был план буйынса Рурҙың ауыр промышленносе Франция, Италия, Бельгия, Голландия һәм Люксембург промышленносе менән бер гигант күмер һәм ҡорос концернаһына берләшә. АҠШ монополистәре тарафынан етәкселек ителгән был концерна уны ойоштороусыларҙың фекере буйынса агрессив Төньяҡ атлантик союзының хәрби арсеналы, «һуғыш тимерлеге» булып әүерелергә тейеш. Агрессия пландарын эшләүгә элеккеге гитлерсе генералдар ылыҡтырылғандар.

Америка-Англия империалистәре беренсе һәм икенсе бөтә донъя һуғышы араһындағы осорҙа үткәргән үҙҙәренең политикаларын яңы формала ҡабатларға маташалар. Ул саҡта 1914 — 1918 йылдарҙа тар-мар ителгән Германия уларҙың ярҙамында үҙенең хәрби һәм индустриаль ҡеүәтен аяҡҡа баҫтырҙы, уларҙың ярҙамында Гитлер власҡа килде, хәҙер герман мелитаризмы ҡайтадан торғоҙола.

Көнбайыш Германияла немец мелитаризмын ҡайтадан торғоҙоуҙы характерләп, СЕПГ Үҙәк Комитетенең VI пленумындағы сығышында СЕПГ Үҙәк Комитетенең генеральный секретаре Вальтер Ульбрихт был ҡайтадан торғоҙоуҙың биш билдәһен әйтеп үтте. Был, беренсенән, Америка һәм Англия монополистик капиталы менән тығыҙ бәйләнгән ҡорал әҙерләүсе немец промышленниктәренең власын аяҡҡа баҫтырыу, был — икенсенән, хәҙер тормошҡа ашырылған Көнбайыш Германияны ремилитаризациялау, өсөнсөнән, был — СССР-ға, Германия демократик республикаһына һәм башҡа халыҡ демократияһы илдәренә ҡаршы реванш политикаһы үткәреү һәм һуғыш пропагандаһы. Дүртенсенән, Көнбайыш Германия экономикаһын хәрби рельстәргә күсе... Бишенсенән, государство аппаратын ... капиталистик монополияларға буйһон... роу, хеҙмәтсәндәргә ҡаршы фашистик террорҙы көсәү.

Ошо маҡсат өсөн Америка һәм Ан... монополистәре тарафынан әҙерләнгән ги... лерсе Германия 1941 йылдың 22 ию... дә Советтәр Союзына мәкерле һө... яһаған көндән алып 10 йыл ит... үтте. Гениаль полководец иптәш Ста... етәкселегендәге Совет Ҡоралды Көс... тарафынан гитлерсе Германия тар-... ителде.

Тарихтең ошо һабағын хәҙер Аме... һуғыш уты тоҡандырыусылары оно... лар. Улар шулай уҡ Гитлер ... агрессияһын башлаған саҡтағы ... ғанда, хәҙер обстановканың бөтө... икенсе икәнен онотолар. Хәҙер Сове... Союзы етәкселегендәге тыныслыҡ... социализмдең һәм демократияның ҡ... лагеры йәшәй. Польша, Чехословак... Венгрия, Болгария, Румыния, Алб... социализм юлына аяҡ баҫтылар. ... Ҡытай халҡы империалистик йыртҡы... изеүҙәнән азат ителде. Германия демо... тик республикаһы тыныслыҡ терәге ... лып әүерелде.

Америка-Англия империалистәре... яңы агрессив саралары, Европа халҡ... һуғыш усағы булдырыу буйынса ... маташыуҙар көнбайыш илдәрен ... массаларының уларҙың реакцион ... мәттәренең политикаһына ҡарата ... ла ҡырҡыраҡ ҡаршы хәрәкәт итер... ҙырыр. Капитализмдең бөтә ҡаршы... тарының тағы ла ныҡыраҡ кискен... шеүенә килтерер.

Б. Леонть...

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАР...

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙаре: редактор урынбаҫары — 2-53-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02531 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 250..

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№125(8842) 1951 йыл 27 июнь шаршамбы

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА (1-се бит).
БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА (1-се бит).
Н. Васьнов. Комсомолецтәр — металл һыныҡтары йыйнау хәрәкәтенең инициаторҙары (1-се бит).
О. Әбделбәнисов. — Социализмдең бөтә фронт буйынса киңәйтелгән һөжүме съезы (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ә. Йосмағужин.— Туҫарәк эшен уңышлы тамамланы (2-се бит).
А. Закиров. — Юғары идея-теоретик кимәлдә (2-се бит).
Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында (2-се бит).
МӘКТӘПТӘРҘӘ ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫНА ӨЛГӨЛӨ ӘҘЕРЛӘРГӘ (3-сө бит).
ОКТЯБРЬСКИЙҘӘН ХАТТАР. В. Бикчантаев. — З. Севунлтарҙы тобоу (3-сө бит).
В. Ғирфанов. — Бал ҡорттары һәм урожай (3-сө бит).
Потребкооперация системаһының эше хеҙмәтсәндәрҙең һорауына яуап бирерлек итеп ҡуйылыу өсөн (4-се бит).
СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. М. Маликов. — Ауыл хужалығы культураларын өҫтәмә һеркәләндереү (4-се бит).
Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик Федерацияһы исполкомы сессияһының эше тамамланыуы айҡанлы Софияла митинг (4-се бит).
КОРЕЯЛАРЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Ауылда китап сауҙаһы

Колхоз ҡоролошо ауылға бөйөк үҙгәрештәр килтерҙе. Ауыл культуралыланды, ҡаҙанлыҡ мәңгегә бөтөрөлдө. Хәҙер ауылдағы эштең 90 проценттан артығыраҡы механизацияландырылды. Ауыл менән ҡала араһындағы айырма бөтөп бара. Колхозсы крәҫтиәндәр колхоз ҡоролошо шарттарында мул һәм культуралы тормошта йәшәү мөмкинлеген алдылар. Ауылдың йөҙө танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе, колхозсы крәҫтиәндәр героик эшселәр синыфы менән берлектә коммунизм төҙөү өсөн фиҙаҡәр көрәшәләр.

«... Совет крәҫтиәндәре, — тине иптәш Сталин, — улар бөтөнләй яңы крәҫтиәндәр, уларға оҡшашлыҡты кешелек донъяһы тарихы белмәй ине әле». Колхозсылар алдынғы мичуринсе агробиология фәне нигеҙендә эшләйҙәр, ҡеүәтле трактор һәм комбайндар менән идара итәләр.

Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте колхоз ҡоролошоноң артабанғы уңыштары өсөн, колхозсы крәҫтиәндәрҙең культура кимәлен артабан күтәреү, колхозсыларҙы коммунистик тәрбиәләүҙе көсәйтеү өсөн ғәйәт ҙур хәстәрлек күрә. Беҙҙә хәҙер ауылдарҙа дөйөм етө йыллыҡ уҡыу тормошҡа ашырыла, клубтарҙың, уҡыу өйҙәренең, библиотекаларҙың селтәре киңдән-киң киңәйә. Газета-журналдарҙы, китаптарҙы регуляр уҡыу һәм улардан файҙаланыу колхоз ауылы кешеләренең көндәлек тормошона ғәҙәт булып инде. Ерҙә яңы, яҡты тормош төҙөү юлдарын өйрәтеүсе марксизм-ленинизм әҫәрҙәре, художестволы әҙәбиәт, алдынғы совет агробиология фәне китаптарына ҡарата колхоз крәҫтиәндәренең талабы тайпылышһыҙ арта бара.

Ленинсе-сталинсе милли политика тантана иткән беҙҙең илебеҙҙә марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен халыҡтарҙың үҙ телдәрендә уҡыуҙарына киң мөмкинлек асылды. Башҡорт халҡы хәҙер Маркс, Энгельс, Ленин һәм Сталин әҫәрҙәрен башҡорт телендә уҡый. Ленин — Сталин әҫәрҙәре хәҙер башҡорт телендә меңәрләгән данала баҫып сығарылды. В. И. Лениндең һайланма әҫәрҙәренең ике томының беренсе томы баҫылып сыҡты һәм икенсе томы баҫыла. Быйыл ВКП(б) Үҙәк Комитетенең рөхсәте һәм ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитетенең ҡарары менән иптәш Сталин әҫәрҙәренең 16 томы башҡорт телендә баҫыла башлауы — башҡорт халҡының культура тормошонда бик ҙур ваҡиға булып тора.

Республикала бынан башҡа йыл һайын бик киң тематикала китаптар, брошюралар баҫылып сыға. Ағымдағы йылда Башҡорт государство издательствоһы тарафынан баҫып сығарылаһан китаптарҙың һаны тағы ла 2 миллион данаһан артып китте.

Хәҙер миллион даналарҙа баҫып сығарылаған китаптарҙы үҙ ваҡытында уҡыусыларға еткереү, улар менән яҡшы сауҙа итеүҙе ойоштороу мөһим бурыстарҙың береһе булып иҫәпләнә. Китап баҫылып сыҡҡандан һуң, уның уҡыусылар ҡулына барып инеү юлын мөмкин тиклем ҡыҫҡартырға кәрәк.

Һуңғы йылдарҙа китап менән сауҙа итеүҙең дөйөм күләме, һуғышҡа тиклемге осор менән сағыштырғанда, бик күпкә артты. Ауыл эшсәндәренең китап кәштәләре яңы әҫәрҙәр менән байыҡтырылды, колхозсылар уларҙы уҡып һәм файҙаланып, колхоз производствоһын артабан үҫтереү буйынса ҙур-ҙур уңыштарға өлгәшәләр. Игенселек культураһын һәм малсылыҡтың тоҡомон, шулай уҡ уның продукт биреүсәнлеген күтәреүҙә алдынғы фән ҡаҙаныштарын өйрәткән китап колхозсыға даими һәм ышаныслы ярҙамға килә.

Ләкин республикабыҙҙа китап менән сауҙа итеү эше һис ҡәнәғәтләнерлек түгел әле. Сауҙа ойошмаларында издательстволар тарафынан баҫылып сығарылған китаптарҙы үҙ ваҡытында колхоз ауылдарына еткереү буйынса түҙеп тора алмаҫлыҡ һүлпәнлек бар, китапты икенсе разряд тауарҙар иҫәбенә индереү кеүек зарарлы ҡараштар ҙа йәшәй. Потребитель обществоларының ҡайһы бер район работниктәре тарафынан китаптар менән сауҙа итеү эшен баһаламау факттары ла бар. Нуриман райпотребсоюзы быйыл договор буйынса 63 мең һумлыҡ китап һатырға тейеш ине. Ләкин райондағы 7 сельпоның береһе лә үҙенә бирелгән планды үтәмәгән. Йылдың тәүге яртыһында китап менән сауҙа итеү планы тик яртылашҡа ғына үтәлгән. Әсе тапҡыр әсеңдә Иҫке Йәнәй, Яңы Субай сельполарында бары 100-әр һумлыҡ ҡына китап һатылған. Райсоюздың базаһында йыл башынан бирле 24 мең һумлыҡ китап һатылмай ятҡырыла. Ө сельполарҙа һатылмай ятҡан китаптарҙың дөйөм суммаһы 35 мең һум тәшкил итә. Был ҙур етешһеҙлек райпотребсоюз етәкселегендә сериоз тревога тыуҙырырға һәм килеп тыуған хәлде ашығыс төҙәтеү өсөн эшлекле саралар күрелергә тейеш ине. Ләкин райпотребсоюз председателе иптәш Валиев «беҙҙең прилавка работниктәре китап һата белмәйҙәр бит әле» тип нигеҙһеҙ һылтаныуҙан ары китә алманы. Китап менән сауҙа итеүҙә Маҡар һәм Әбйәлил райондарында ла шундай уҡ күренештәр булды.

Ә ВКП(б)-ның Нуриман, Маҡар һәм Әбйәлил райкомдарының пропаганда һәм агитация бүлектәре китап менән сауҙа итеүҙең һис ҡәнәғәтләнмәҫлек ҡуйылыуына килешеп ҡарайҙар, был эшкә контроль булдырмайҙар, уны тулыһы менән прилавка работниктәренә генә ышанып тапшыралар.

Сауҙа работниктәре үҙҙәренә ышанып тапшырылған был яуаплы һәм бик почетлы эште намыҫ менән башҡарыуға өлгәшергә тейештәр. Ә урындағы партия, совет ойошмалары был эштең ойошторолошона актив ҡатнашырға, уға етәкселек итергә, китаптарҙы пропагандалауҙы киң йәйелдерергә бурыслылар. Һәм ысынлап та массалар араһында яңы сыҡҡан теге йәки был китап тураһында беседалар үткәреү, уның йөкмәткеһен һөйләп аңлатыу, китаптарҙы йөрөтөп һатыуҙы ойоштороуҙы ҡулланыу, һис шикһеҙ, ыңғай һөҙөмтәләр бирер ине.

Китап сауҙаһы менән туранан-тура шөғөлләнеүсе КОГИЗ һәм уның урындағы магазиндәре һәм киоскылары эше менән даими ҡыҙыҡһыныу, урындарҙа уларға ҡарата контролде бик нығ көсәйтеү талап ителә. Ҡайһы бер райондарҙа уларҙы республика буйһоноуындағы магазиндәр итеп, уларҙың эштәренә ҡатышмауселлыҡ позицияһында торалар, үҙҙәрен «артыҡ машәҡәттән» ҡотҡарып алып ҡалалар. Ә КОГИЗ-дең республика бүлексәһе һәм уға етәкселек итеүсе БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге полиграфия, издательство һәм китап менән сауҙа итеү управлениеһы етәкселәре үҙ науботтәрендә китап сауҙаһындағы етешһеҙлектәрҙе теркәү менән генә сикләнәләр, урындарҙа һирәк булалар, булғанда ла күп ваҡытта мәғлүмәттәр йыйнау менән генә ҡәнәғәтләнәләр.

Шуның менән бергә, сауҙа работниктәре һәм китап алыусылар республика государство издательствоһына ҡарата ла законлы талаптар ҡуялар. Айырым китаптар техник оформление яғынан тейешле сифатта сығарылмайҙар. Һөҙөмтәлә типографиянан сауҙа ойошмаларына барып еткәнсе, насар төпләнгәнлектән ҡайһы бер китаптар таушалып та бөтәләр. Мәҫәлән, күптән түгел генә Башгосиздат шағир Мостай Кәримдең «Яҙғы ер» тигән китабын баҫып сығарҙы. Ләкин йөкмәткеле әҫәрҙең техник оформлениеһенә ҡул етмәгәнлеген күрәһең, уны йоҡа ғына ҡағыҙ менән тышлағандар һәм уның урынға барып еткәнгә тиклем үк таушалып бөтөүе тураһында жалобалар килә. Китаптың йөкмәткеһе менән бер рәттән, тышҡы сифаты өсөн дә көрәшергә кәрәк, продукцияның сифатына зыян килтерә торған ҡараштарға юл ҡуйылмаҫҡа тейеш.

Хәҙер колхоз ауылы яңы үҫеш осорон кисерә. Колхоздар эреләтеләләр, механизация кәстәре киң индерелде, колхоз производствоһы ҡыҙыу темптар менән үҫә. Был үҫеште артабан ныҡытыу һәм тағы ла алға ебәреү өсөн кәрәкле китаптың тәрбиәләүсе роле, уның ярҙамы баһалап бөтөргөһеҙ.

Китап — бөтә халыҡ байлығы һәм ул халыҡтың рухи аҙығы. Китап — коммунистик общество төҙөүҙә партия ойошмаларының яҡын ярҙамсыһы. Китапты ауылға күберәк килтерергә һәм уны һатыуҙы яҡшы ойошҡанлыҡ менән алып барырға кәрәк. Был мөһим эшкә партия, комсомол, профсоюз һәм совет ойошмалары даими иғтибар булдырырға тейештәр.

СССР Министрҙар Советында

Генерал-полковник Гришин Иван Тихоновичтең вафатын мәңгеләштереү тураһында һәм семьяһын тәьмин итеү тураһында

ССР Союзы Министрҙар Советы ҡарар итте:

1. Генерал-полковник Гришин Иван Тихонович ҡәберенә һәйкәл ҡуйырға.

2. И. Т. Гришиндең ҡатыны — Вера Глебовна Гришинаға 50 мең һум күләмендә бер ваҡытлы пособие бирергә.

3. И. Т. Гришин семьяһына персональ пенсия билдәләргә:

Ҡатыны Вера Глебовна Гришинаға ғүмере буйына ай һайын 1200 һум күләмендә;

Улы Анатолий Гришинға юғары белем алғанға тиклем ай һайын 600 һум күләмендә;

ҡатынының әсәһе Матрена Федоровна Фирцеваға ғүмере буйына ай һайын 600 һум күләмендә.

4. Генерал-полковник Иван Тихонович Гришинде ерләү буйынса расходтарҙы государство иҫәбенә алырға.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА

☆

Ҡазандағы „Серп и молот“ заводының 100 йыллығы

ҠАЗАН, 25 июнь. (ТАСС). 25 июнда Ҡазан «Серп и молот» транспорт оборудованиелары заводының коллективы үҙ предприятиеһының 100 йыллығын билдәләне.

«Серп и молот» заводы аҫылмалы ҡанат юлдар етештерә. Удар Донецк һәм Славянск судно заводтарында, Донбастың күмер шахталарында уңышлы ҡулланылалар.

Хәҙер завод «Куйбышевгидрострой» өсөн Волга аша аҫылмалы ғәйәт ҙур йөк ташыу магистрален етештереү буйынса яуаплы заказды үтәргә әҙерләнә.

Заполярьелә йәй

СЫКТЫВКАР, 25 июнь. (ТАСС). Алыҫ Төньяҡ һәм Заполярье райондарында йәйге йылы көндәр башланды. Бына икенсе ай инде бында ҡояш байымай. Беренсе сәскәләр күренә башланы. Тайга һәм Тундра йәшелләнде.

Воркута, Ухта, Сыктывкар магазиндәрендә иртә өлгөрәүсе емештәр һатыла башланы. Ҡояшлы Молдавиянан летчиктәр бында 15 мең тоннанан артығыраҡ черешня килтерҙеләр. Летчик-миллионер Алтунин республикаға абрикостар килтерҙе.

Ҡиммәтле тәҡдимде киңерәк таратырға

ЧЕЛЯБЕ, 25 июнь. (ТАСС). Уралдағы Сталин исемендәге автомобиль заводының коллективы «ЗИС—5» йөк ташыу автомобилдәренең хеҙмәт итеүенең гарантия срогын оҙайтыу өсөн ярыш инициаторы булып сығыш яһаны. Урал автомобиль төҙөүселәре машиналарҙың капиталь ремонтҡа тиклем эшләүен ике тапҡырға арттырыуҙы тәьмин итергә йөкләмә алдылар.

25 июнда ВКП(б)-ның Челябе Өлкә Комитет бюроһы автомобиль төҙөүселәр коллективының ҡиммәтле башланғысын яҡланы. Өлкә промышленность предприятиеләренең һәм төҙөлештәренең партия ойошмаларына автомобиль төҙөүселәрҙең тәжрибәһен өйрәнергә һәм таратырға, бөтә эшселәрҙе, инженерҙарҙы, техниктарҙы һәм хеҙмәткәрҙәрҙе ярышҡа ылыҡтырырға тәҡдим ителде.

Скумбрия тотоу

ВЛАДИВОСТОК, 25 июнь. (ТАСС). Приморье балыҡ-промысловой разведка самолеттары Амур һәм Уссурий ҡултыҡтарында бик күп скумбрия булыуын билдәләгәндәр. Уны тотоу өсөн сейнер флоты ебәрелде.

Зарубино балыҡ комбинатының сейнерҙары ике көн эсендә 8,5 мең бот скумбрия тоттолар. Капитан Баранов сейнеренең экипажы балыҡты айырыуса күп тотто. Ул 24 июнда 1,635 бот балыҡ тотто, бер көнлөк заданиене 5 тапҡырға тиерлек арттырып үтәне. Капитан Никитин командаһы 1700 бот скумбрия тотто.

«Новый мир», «Моряк», «Рыбалов» балыҡ тотоу колхоздары балыҡты бик күп тоталар.

☆☆

В. И. Ленин исемендәге Бөтә Союз ауыл хужалығы фәндәре академияһында

Дөйөм төҙөлөштәр райондарында һуғарыуҙы үҫтереү мәсьәләһе буйынса пленум

25 июнда Мәскәүҙә В. И. Ленин исемендәге Бөтә Союз ауыл хужалығы фәндәре Академияһының гидротехника һәм мелиорация секцияһының Волга буйында, Каспий буйында, Украинаның көньяғында һәм Төньяҡ Ҡырымда һуғарыуҙы үҫтереү мәсьәләләренә арналған пленумы асылды. Пленум эшендә коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре райондарында һуғарыуҙы үҫтереү менән бәйләнгән проблемаларҙы хәл итеү менән шөғөлләнеүсе илебеҙҙең 30-ға яҡын ғилми-тикшеренеү учреждениеларының вәкилдәре ҡатнаша.

СССР Ауыл хужалығы министрының урынбаҫары иптәш М. Н. Попов доклад менән сығыш яһап, Аму-Дарьянан алып Днепрға тиклемге ғәйәт ҙур территорияла яҡын йылдарҙа буласаҡ мәһабәт үҙгәрештәр тураһында һөйләне. Илебеҙ 6 миллион гектарҙан артығыраҡ һуғарыла торған баҫыу аласаҡ. Бынан тыш, 22 миллион гектарға яҡын ялан һыу менән тәьмин ителәсәк, был, малсылыҡты үҫтереү өсөн ыңғай шарттар тыуҙырасаҡ. Бөйөк төҙөлөштәр тамамланғас, илебеҙ йыл һайын өҫтәмә рәүештә 10-ар миллионлаған центнер мамыҡ, бойҙай, шәкәр сөгөлдөрө, бик күп емеш, виноград, йәшелсә аласаҡ.

Иптәш Попов Волга артында һәм Каспий яғында һуғарыуҙы үҫтереү буйынса производство ойошмалары һәм ғилми-тикшеренеү учреждениелары эшенең торошо һәм бурыстары тураһында һөйләне.

СССР Мамыҡсылыҡ министрының урынбаҫары иптәш А. Н. Асқочевский Украинаның көньяғында һәм Төньяҡ Ҡырымда һуғарыуҙы үҫтереү тураһында доклад яһаны.

Гидротехника һәм мелиорацияның Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү институтының директоры А. М. Царевский, Украина гидротехника һәм мелиорация ғилми-тикшеренеү институтының директоры С. М. Алпатьев, Саратов ауыл хужалығы экономикаһы институтының өлкән ғилми сотрудниге П. Д. Худяков һәм башҡа ғалимдар коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре райондарында һуңғы ваҡытта үткәрелгән ғилми-тикшеренеү эштәре тураһында докладтар менән сығыштылар.

(ТАСС).

В. И. Лениндең „Аграр мәсьәлә һәм „Маркс тәнҡитләү“ тигән әҫәрен украин телендә баҫып сығарыу

КИЕВ, 25 июнь. (ТАСС). Украина ССР-ының политик әҙәбиәт государство издательствоһы В. И. Лениндең «Аграр мәсьәлә һәм «Маркс тәнҡитләү» тигән әҫәрен украин телендә баҫып сығарҙы.

Әҫәр 30 мең данала баҫылды.

„Куйбышевгидрострой“ға тимер юлы

ЖИГУЛЕВСК, 25 июнь. (ТАСС). Волганың уң яҡ ярында Жигулевскиҙа беренсе тапҡыр паровоз гудогы ишетелде. 24 июнда, көндөҙ сәғәт 5-тә, Куйбышев гидроэлектростанцияһын төҙөүселәр СызранДан Жигулевскиға тиклем һалынған тимер юл буйлап килгән беренсе поезды ҡаршыланылар.

Был юл былтыр көҙ һалына башлағайны. Ауыр шарттарҙа төҙөүселәр коллективы ҙур күләмдә ер эштәрен башҡарҙы. Самара луҡаһы районында урман һәм Жигулевск тауҙары аша тимер юл линияһы үткәрҙе. Куйбышев, Ульяновск, Саратов, Пенза, Чкалов өлкәләренең колхозсылары төҙөлөшкә байтаҡ ярҙам күрһәттеләр.

Беренсе поезд гидроузелдың уң яҡ ярҙағы районына төҙөлөш механизмдарын килтерҙе. Унда гидроэлектростанция бинаһы өсөн котлован ҡаҙыу буйынса эштәр йәйелдерелә.

Поезды ҡаршы алған гидростанцияны төҙөүселәр төҙөүсе тимер юлсыларҙы ҡайнар ҡотланылар. Митинг булды, унда тимер юлсылар, гидроузелды Куйбышев менән бәйләйәсәк һул яҡ ярҙағы тимер юлын һалыуҙы 7 ноябргә тамамлаясаҡтарына ышандырҙылар.

Нефтселәр ярышы

ГРОЗНЫЙ, 25 июнь. Иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн нефть промыселдарында, нефть эшкәртеү заводтарында социалистик ярыш барған һайын киңерәк йәйелдерелә.

Алдынғы стахановсы эш методтарын тормошҡа ашырып, нефтселәр көндән-көн нефть сығарыу һәм уны эшкәртеүҙе арттыра баралар. Ошо йылдың башынан бирле улар пландан тыш меңдәрсә тонна нефть продукттары бирҙеләр.

«Октябрьнефть» тресының икенсе промыселаһы коллективы ҙур хеҙмәт еңеүҙәренә өлгәште. Бында үҙенең заданиеһен үтәмәгән бер генә мастер ҙа, оператор ҙа һәм ер аҫты ремонты эшсеһе лә юҡ. Промысла коллективы социалистик йөкләмәләр иҫәбенә пландан тыш һуңғы тонна нефтте сығара.

«Таштаҡаланефть» тресы промыселдары пландан тыш бер нисә эшелон нефть сығарҙылар. Был трестың иптәш Фаногин етәкселек иткән алдынғы бригадаһы пландан тыш 6 мең тонна нефть бирҙе.

Бораулаусылар араһында Ташҡала конторалы коллективы алда бара, был контора пландан тыш бер нисә мең погон метр бирҙе.

«Главнефтезаводы» берекмәһе коллективтәре пландан тыш яҡты нефть продукттары биреү буйынса алған йөкләмәләрен уңышлы үтәйҙәр.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Рус драма театрында ҙур уңыш менән «Анна Каренина» постановкаһы бара. Пьеса бөйөк рус яҙыусыһы Л. Н. Толстойҙың шул исемдәге романы буйынса эшләнгән.

Һүрәттә: постановканан бер күренеш. Анна Каренина үҙенең улы Сережа менән. Анна ролендә РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы З. Бикбулатова.

А. Червинский фотоһы.

Район партия активы йыйылышы

Әлшәй районында партия активының йыйылышы булып үтте. Йыйылышта ВКП(б) Өлкә Комитеты пленумының «Республикала ялғы сәсеүҙең йомғаҡтары, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерлек һәм ауыл хужалығы продукттары әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары» тураһындағы ҡарары буйынса райком секретаре иптәш Чурсиндың докладын тыңланды.

Партия активы йыйылышы мал аҙыҡтары әҙерләү һәм урожай йыйыуға әҙерлек сараларын ойоштороуға арналған конкрет ҡарар ҡабул итте.

Ғ. Ғәйнетдинова.

Эреләтелгән колхоз юл төҙөү планын үтәне

Бөрйән районының Сталин исемендәге колхозы юл төҙөү эше буйынса үҙенә төшкән планды районда беренсе булып срогынан алда тамамланы.

Колхоз председателе иптәш Ә. Уразаев юл төҙөү эшендә эшсе һәм тартыу көстәрен дөрөҫ итеп ойоштороҙо. Был эш социалистик ярыш нигеҙендә алып барылды.

Был колхоз менән бер рәттән, Ворошилов исемендәге, «Урал» колхоздары ла үҙҙәренә бирелгән юл төҙөү планын срогынан алда үтәнеләр. Колхоз председателдәре Д. Баязитов, Н. Байназаров иптәштәр ҙә, был эштең әһәмиәтен яҡшы аңлап, эште дөрөҫ ойоштороҙолар.

Был өс колхоздың да колхозсылары ҙур активлыҡ һәм ойошҡанлыҡ күрһәттеләр.

Д. Юлмөхәмәтов.

Комсомолецтәр—металл һыныҡтары йыйнау хәрәкәтенең инициаторҙары

Черниковск ҡалаһының «Башнефтестрой» тресындағы «Автозапчасть» конторалы комсомолецтәре ҡаланың бөтә йәштәрен металл һыныҡтары йыйнау өсөн поход ойоштороурға саҡырып мөрәжәғәт иттеләр. ВЛКСМ-дың ҡала комитеты йәш төҙөүселәрҙең был ҡиммәтле инициативаларын хуплап ҡаршы алды. Ҡала комитеты бюроһы предприятиеләрҙең комсомол комитеттарына комсомолецтәрҙең мөрәжәғәтен тикшереп, металл һыныҡтары йыйнау буйынса конкрет план төҙөргә һәм эшкә башларға тәҡдим итте.

«Автозапчасть» конторалы комсомолецтәренең башланғысы ҡала предприятиеләренең йәштәре араһында ҡайнар яҡлау тапты. Комсомолецтәр һәм йәштәр үҙҙәренең дөйөм йыйылыштарында мөрәжәғәтте тикшереп, металл һыныҡтары йыйнау буйынса конкрет йөкләмәләр алдылар һәм илебеҙҙең мартен мейестәренә күберәк өҫтәмә ҡара һәм төҫлө металл биреү өсөн поход ойоштороп ебәрҙеләр.

Металл йыйнау хәрәкәте инициаторҙарын һүҙҙә эштән айырылманы. Бер ай эсендә «Автозапчасть» конторалының һәр бер комсомолецы һәм йәш эшсеһе 100-әр килограмм ҡара металл һыныҡтары йыйнап тапшырҙы.

Ҡаланың бөтә предприятиеләрендә лә — «Металл өсөн походҡа» тигән лозунг аҫтында йәштәрҙең эштән буш ваҡыттарында субботниктар һәм воскресниктар үҙғарыла. Ҡаланың комсомолецтәре йәштәр менән берлектә 50-нән артыҡ субботник үткәрҙеләр ҙә инде. Был субботниктарҙа өс меңдән артыҡ йәштәр ҡатнашты һәм улар бер мең тоннанан артыҡ металл һыныҡтары йыйнап оҙаттылар.

Черниковск төҙөлөш тресының йәштәре (комсомол комитеты секретаре иптәш Новиков) металл йыйнауҙа айырыуса уңышлы һөҙөмтәләр күрһәттеләр. Тресның 9-сы номерлы төҙөлөш конторалында үҙғарылған комсомолец-йәштәр воскресниктәндә 41 тонна металл йыйналды. 10-сы контора йәштәре 24 тонна, кирбес заводы комсомолецтәре 13 тонна металл йыйнанылар. Комсомолецтарҙан һәм йәш эшселәрҙән Афонин, Косенко, Бикбулатов, Юнысов, Ғәлиев һәм башҡа иптәштәр металл йыйнау эшендә ҙур активлыҡ күрһәттеләр.

1-се номерлы ТЭЦ коллективы металл һыныҡтары йыйнау заданиеһын байтаҡ арттырып үтәне. Бында комсомолецтәрҙең (ВЛКСМ комитеты секретаре иптәш Сергеев) һәм союздан тыш йәштәрҙең актив ҡатнашлығында 214 тонна металл йыйнап оҙатылды.

Химия продукттары етештереү заводы коллективы металл һыныҡтары йыйнау буйынса үҙенең заданиеһын алты тапҡырға арттырып үтәне. Заводтың комсомолецтәре һәм союздан тыш йәштәре (комитет секретаре иптәш Афанасьев) эштән һуң бик күп бер рәттән металл һыныҡтары йыйнау ойоштороп, 180 тоннанан артығыраҡ ҡара металл йыйнап тапшырҙылар.

Электр лампалары заводының комсомол ойошмаһы секретарҙәре Козлов һәм Комаров иптәштәр булған цехтарҙың йәштәре 5 көн эсендә 15 тонна ҡара һәм төҫлө металл йыйнанылар.

«Дубитель» заводының комсомолецтәре лә (секретаре иптәш Мошкин) 67 тонна, 1-се Май исемендәге шырпы фабрикаһының йәштәре (комсомол ойошмаһы секретаре иптәш Ғәбәйҙуллин) 12 тонна металл йыйнап оҙаттылар. Кислород заводында, 1-се Май исемендәге промартелдә, протез заводында, фанера комбинатында, «Главвостоконефтестрой» тресының механизация конторалында ла комсомолецтәр һәм йәштәр металл йыйнауҙа инициатор булдылар. Был предприятиеләрҙең комсомол ойошмалары етәкселәре йәштәрҙең Тыуған илебеҙ өсөн файҙалы, гүзәл башланғысы ниндәй ҙур әһәмиәткә эйә булғанын дөрөҫ аңлағандар һәм комсомолецтәрҙең был уңышлы эштәрен тормошҡа ашырыуға етәкселекте дөрөҫ ойоштора алғандар.

Ләкин ҡайһы бер предприятиеләрҙең комсомол ойошмалары секретарҙәре был мөһим мәсьәләнең әһәмиәтен аңлап еткермәгәндәр.

Нефть эшкәртеү заводында (комсомол комитеты секретаре иптәш Грязнов), «Натурҡаучук» заводында (секретаре иптәш Чистяков) «Востоконефтепроводстрой» (секретаре иптәш Романова) һәм башҡа предприятиеләрҙән комсомол ойошмалары металл һыныҡтарын йыйнау эшенән ситтә торалар. Комсомолецтәре һәм союздан тыш йәштәре ҡара һәм төҫлө металл һыныҡтарын йыйнау буйынса государство заданиеларын үтәү эшенә мобилизовать итмәйҙәр. Был предприятиеләрҙә әле бөгөнгә көнгә тиклем «Автозапчасть» конторалы комсомолецтәренең мөрәжәғәте, комсомолецтәрҙең дөйөм йыйылышында түгел, комитет ултырыштарында ла тикшерелмәгән.

Илебеҙгә металл нефть, күмер һәм икмәк кеүек үк кәрәк. Шуның өсөн ҡара һәм төҫлө металл һыныҡтарын йыйнау буйынса государство тарафынан бирелгән заданиеларҙы үтәүҙә партия һәм хужалыҡ ойошмаларына практик ярҙам күрһәтеү һәр бер комсомол ойошмаһының, һәр бер комсомолецтең һәм һәр бер йәш эшсенең мәртәүле бурысы булып тора.

Н. Васьнов,
ВЛКСМ-дың Черниковск ҡала комитетының эшсе йәштәр бүлеге мөдире.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Түңәрәк эшен уңышлы тамамланы

Үткән йыл Башгосиздат партия ойошмаһы партия тарихын өйрәнеү буйынса түңәрәк ойоштторғайны. Был түңәрәк быйыл үҙенең эшен уңыш менән тамамланы.

Ошо көндәрҙә генә үткәрелгән йомғаҡлау занятиеһе түңәрәк члендәренең материалды яҡшы үҙләштергәнлектәрен күрһәтте.

Түңәрәктә партия члендәренән дүрт кеше: техник редактор Рәхимов Р. Ш., өлкән художник Ғүмәров Р. Г., корректор Яхина Р., склад мөдире Шаймарданов Ш. иптәштәр уҡыны. Етәксеһе — издательствоның редакторы иптәш Сабашев Р. Түңәрәктең составы ла, етәксеһе лә ике йыл буйына үҙгәрмәне. Был хәл уҡыуҙың уңышлы сығыуы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булды.

Түңәрәк үҙенең эшен план буйынса алып барҙы. Аҙнаға бер тапҡыр үткәрелгән занятиеләрҙән тыш, иптәш Сабашев уҡыусылар менән даими консультациялар алып барҙы. Иптәш Сабашевтың занятиеләре һәр ваҡыт күңелле һәм йәнле булып үттеләр, сөнки ул занятиеға ныҡлы әҙерлек менән килә торғайны. Иптәш Сабашев партия райкомы янында үткәрелә торған пропагандистар семинарының һәм методик кәңәшмәләрҙең даими йөрөүсеһе генә түгел, бәлки актив ҡатнашыусыһы ине. Ул семинарға тәрлесә әҙерләнә, унда сығыш яһамай ҡалмай ине. Материалды яҡшы белеү уға занятиеләрҙе юғары кимәлдә үткәрергә мөмкинлек бирҙе. Ул занятиелә күргәҙмә пособиелар ҙа ҡулланды.

Партия ойошмаһы ла түңәрәктең эше өсөн шарттар булдырырға тырышты. Партбюро түңәрәктең эшен үҙенең иғтибарынан төшөрмәй күҙәтеп барҙы. О был тыңлаусыларға үтелгән материалдарҙы яҡшы үҙләштерәүгә мөмкинлек биреүҙә мөһим фактор булып тора.

Был түңәрәк үҙенең алдына яуаплы бурыстар ҡуйғайны: партия тарихен тәрән өйрәнеү менән бергә, түңәрәк члендәрен киләсәктә үҙ аллына эшләүгә өйрәтеү һәм әҙерләү. Был һуңғы бурыс пропагандист тарафынан һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә тотолдо: ул түңәрәк члендәрен үҙ һүҙҙәре менән һөйләүгә, конспектты үҙ һүҙҙәре менән яҙыуға өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙы.

Һәм был бурыс үтәлде, тип әйтеп буҙа. Бына йомғаҡлау занятиеһе бара. Етәксе уҡыусылар алдына төп мәсьәләләрҙе ҡуя. Түңәрәк члендәре бер-бер артлы төрөп материалды һөйләп бирәләр. Бына иптәш Рәхимов партияның X съезы тураһында һөйләй. Ул материалды үҙ тәжрибәһе менән һөйләп бирә. Ул конспектҡа ҡарамай, үҙ һүҙе менән һөйләй. Рәхимов һөйләп туҡтағас, башҡа иптәштәр айырым положениеләрҙе тулыландыралар. Занятие бөткәнсе шулай барҙы. Рәхимов һәм Яхина иптәштәр айырыуса активлек күрһәттеләр.

Занятие тамамланы. Партияның Ленин райкомы вәкиле иптәш Либухтин түңәрәк члендәренең яҡшы уңышлылыҡтарын, йомғаҡлау занятиеләрена яҡшы әҙерләнгәнлектәрен күрһәтеп үтә.

Партбюро һәм партия райкомы вәкилдәре иптәштәр алдына киләһе йылда уҡыуҙың нисек тәрән һайлау мәсьәләһен ҡуйҙылар. Түңәрәк члендәре бер-бер артлы сығып һөйләп, үҙҙәренең теләктәрен белдерҙеләр. «Беҙ хәҙер материалды үҙ аллыбыҙға өйрәнеүгә мөмкинлек алдыҡ. Беҙ киләһе йылда партия тарихен беренсе сығанаҡтар буйынса үҙ аллыбыҙға өйрәнергә теләйбеҙ», тиҙәр улар. Һәм был бушҡа ғына әйтелгән һүҙ түгел, тип ышанырға кәрәк.

Иптәш Сталин партияның XVIII съезында былай тине: «...Фәндең шундай бер тармағы бар, ул тармаҡты белеү фәндең бөтә тармаҡтарындағы большевиктар өсөн мәжбүри булырға тейеш, ул общество тураһындағы, обществоның үҫеш законлары тураһындағы, пролетар революцияһының үҫеш законлары тураһындағы, социалистик төҙөлөштөң үҫеш законлары тураһындағы, коммунизмдең еңеүе тураһындағы марксистик-ленинсе фән». Иптәш Сталиндең был күрһәтмәһе идеология өлкәһендә эшләүсе иптәштәргә бигерәк тә ныҡ ҡағыла, сөнки марксистик-ленинсе фәнгә эйә булмай тороп, идеология өлкәһендә эшләү мөмкин түгел. Марксизм классиктәре әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә итеү, яңы китаптар баҫып сығарыу өлкәһендә эшләүсе Башҡорт государство издательствоһы работниктәре өсөн большевизм теорияһына эйә булыу айырыуса мөһим бурыс.

Шул күҙлектән ҡарағанда, партия тарихен түңәрәктә өйрәнеүҙе тамамлаған иптәштәр үҙҙәренең марксистик-ленинсе белемдәрен киңәйтеү һәм тәрәнәйтеү юлында киләсәктә лә тырышып эшләргә тейештәр.

Ә. Йомағужин,
партбюро секретаре.

Юғары идея-теоретик кимәлдә

ВКП(б)-ның Ленин райкомы партия мәғарифе системаһында уҡыу йылын ойошҡанлыҡ менән, юғары идея-теоретик кимәлдә тамамлауҙы тәьмин итеү өсөн күп кенә практик саралар күрҙе. Йомғаҡлау занятиеләрен үткәреү мәсьәләләре партия активының, тәүге ойошма секретарҙарының йыйылыштарында тикшерелде. Пропагандистәр, консультанттар менән методик семинарҙар үткәрелде.

Большевизмдең теорияһын һәм тарихен өйрәнеүселәргә ярҙамға күп кенә обзор лекциялар уҡылды. Бына был саралар ыңғай һөҙөмтәләр бирәләр. Йомғаҡлау занятиеләре уңышлы бара.

Электр селтәре партия ойошмаһында «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәгенең тыңлаусылары бәседала актив ҡатнаштылар һәм һорауҙарға тәрән йөкмәткеле яуап бирҙеләр. Тыңлаусыларҙан Котов, Щепилина, Малифеев, Әхмәдуллин, Урәҙбаев һәм Таһиров иптәштәр үтелгән материалды айырыуса яҡшы белеүҙәрен күрһәттеләр. Геология управлениеһе партия ойошмаһында диалектик материализмды өйрәнеү түңәрәге үҙенең эшен бик яҡшы һөҙөмтәләр менән тамамланы. Бында йомғаҡлау занятиеһе юғары идея кимәлендә үткәрелде.

Район партия ойошмаһы йомғаҡлау занятиеләрен бөтә түңәрәктәрҙә һәм политик мәктәптәрҙә лә юғары кимәлдә үткәреү өсөн бөтә сараларҙы күрә.

А. Заһиров,
ВКП(б)-ның Ленин райкомы партия кабинеты мөдире.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы тарафынан башҡорт әҙәби теленең орфографияһына түбәндәге асыҡлауҙар индерелде:

ИҪКЕ РЕДАКЦИЯ				ЯҢЫ РЕДАКЦИЯ			
1. Алфавит.				1. Алфавит.			
1. Алфавиттағы хәрефтәрҙең урынлашыу тәртибе (башҡорт теленең алфавите 41 хәрефтән тора).				1. Башҡорт теленең алфавите 42 хәрефтән тора. Уларҙың урынлашыу тәртибе.			
Баҫма хәрефтәр	Хәрефтәр исеме	Баҫма хәрефтәр	Хәрефтәр исеме	Баҫма хәрефтәр	Хәрефтәр исеме	Баҫма хәрефтәр	Хәрефтәр исеме
А а	а	Р р	эр	А а	а	П п	пэ
Б б	бе	С с	эс	Б б	бэ	Р р	эр
В в	ве	Ҫ ҫ	ҫе	В в	вэ	С с	эс
Г г	ге	Т т	тэ	Г г	гэ	Ҫ ҫ	ҫе
Ғ ғ	ғы	У у	у	Ғ ғ	ғы	Т т	тэ
Д д	дэ	Ү ү	ү	Д д	дэ	У у	у
Ҙ ҙ	ҙе	Ф ф	эф	Ҙ ҙ	ҙе	Ү ү	ү
Е е	е	Х х	ха	Е е	е	Ф ф	эф
Ж ж	же	Һ һ	һа	Ё ё	ё	Х х	ха
З з	зэ	Ц ц	це	Ж ж	жэ	Һ һ	һа
И и	и	Ч ч	че	З з	зэ	Ц ц	це
Й й	й	Ш ш	ша	И и	и	Ч ч	че
К к	ка	Щ щ	ща	Й й	й	Ш ш	ша
Ҡ ҡ	ҡы	Ъ ъ	ер	К к	ка	Щ щ	ща
Л л	эль	Ы ы	ы (еры)	Ҡ ҡ	ҡы	Ъ ъ	ер
М м	эм	Ь ь	ерь	Л л	эль	Ы ы	ы(еры)
Н н	эн	Э э	э	М м	эм	Ь ь	ерь
Ң ң	эң	Ә ә	ә	Н н	эн	Э э	э
О о	о	Ю ю	ю	Ң ң	эң	Ә ә	ә
Ө ө	ө	Я я	я	О о	о	Ю ю	ю
П п	п			Ө ө	ө	Я я	я

ИҪКЕ РЕДАКЦИЯ

Һуҙынҡылар: а, ә, о, ө, у, ү, ы, э, и, е, ю, я (8-се бит).

ЯҢЫ РЕДАКЦИЯ

Һуҙынҡылар: а, ә, о, ө, у, ү, ы, э, и, е, ё; ю, я.

11. Ё — ё

Ё — ё хәрефе башҡорт әҙәби теленә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: ёлка, щётка. (10-сы биткә өҫтәргә).

ИҪКЕ РЕДАКЦИЯ

Иҫкәрмә: 1. Рус әҙәби теле аша ингән, бер генә нәҙек ижектән торған һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәренә ҡалын ялғауҙар ялғана: литрлыҙар ялғана: литрлыметры, темп—тар, тип—тар, цех—тан, текс—ка, цифр—ға (21-се бит).

ЯҢЫ РЕДАКЦИЯ

Иҫкәрмә 1. Рус әҙәби теле аша ингән, бер генә нәҙек ижектән торған ҡайһы бер һүҙҙәргә ҡалын ялғауҙар ялғана. Бындай бер ижекле һүҙҙәрҙең ҡайһыларында ялғауҙарҙың ҡалын килеүе орфография һүҙлегендә күрһәтелергә тейеш. гер—бы, гет—ры, гипс—ка, грипп—тан, жест—ын, жрец—ты, икс—ка, лит—ры, метр—ы, мех—ты, нетр—ҙар, пресс—ты, приз—ы, рейс—тан, текст—ы, темп—тар, трест—тар, пенз—ы, цех—та, цикл—дар, цинк—тан, цирк—та, цифр—ҙар, чех—тар, швед—тар, шеф—ка, шифр—ы, тип—тар, тир—ға, фетр—ы.

Был һүҙҙәр ҡушма һүҙ составына инеп, уның һуңғы ижеге булып килгәндә лә, үҙәгеге ҡағиҙә һаҡлана: сантиметр—ы, барометр—ға.

ИҪКЕ РЕДАКЦИЯ

II. Аҙаҡтары нг, нк, иск, уск, оск бөтөмдәренең берәһенә бөткән һүҙҙәр килеш, күплек һәм зат менән үҙгәргәндә, аҙаҡтарына ы ҡушып яҙыла: лозунг — лозунгының, лозунгыға, лозунгым, лозунгыһы, лозунгылар; киоск—киоскының, киоскыға, киоскым, киоскың, киоскыһы, киоскылар; банк—банкының, банкым, банкылар. (22-се бит).

ЯҢЫ РЕДАКЦИЯ

II. Аҙаҡтары нг, нк, иск, уск, оск, амп формаларында бөткән һүҙҙәр килеш, күплек һәм зат менән үҙгәргәндә, аҙаҡтарына ы—е ҡушып яҙыла: лозунг—лозунгым, лозунгыһы, лозунгылар, лозунгының, митингеләр, митингенең, банк—банкым, банкың, банкыһы, банкылар, банкыға, пропуск,—пропускым, пропускың, пропускыһы, пропускының, киоскыға, штамп—штампының, штамплар.

Аҙаҡтары мп һәм унт, нт формаһында бөткән һүҙҙәр был ҡағиҙәгә буйһонмайҙар, темп—тар, эш темпы, продукттар, продукт—ты, факт—тар.

ИҪКЕ РЕДАКЦИЯ

М. Интернациональ һүҙҙәрҙән булған сифаттарҙың рус орфографияһында ческий формаһында бөткәне тик ялғауҙары менән бирелә: социалистический — социалистик, механический — механик, механистический — механистик, идеалистический — идеалистик. (22-се бит).

ЯҢЫ РЕДАКЦИЯ

М. Рус теленән ингән шартлы сифаттарҙың ческий йәки тический рәүешендә бөткәндәре һүҙҙең тамыры йәки нигеҙ формаһында алына: коммунистическая партия—коммунистар партияһы, орфографический словарь — орфография һүҙлеге, стилистическая особенность — стиль үҙенсәлеге, педагогический институт—педагогия институты. Был алыу мөмкин булмаған урындарҙа ческий формаһында бөткәне ик, о тический формаһында бөткәне тик ялғауҙары менән бирелә: тематический план—тематик план, социалистическое хозяйство—социалистик хужалыҡ.

ИҪКЕ РЕДАКЦИЯ

Н. Рус орфографияһы буйынса но, ный, кий ялғауы ҡабул иткән сифаттар тамыр йәки нигеҙ формаһында алыналар: реальный — реаль, идеальный— идеаль, пролетарский — пролетар, ударный — удар (эш), культурный— культуралы, культура, активный — актив, актуальный— актуаль, редакционный — редакцион, русский язык — рус теле, капитальный — капиталь. (22-се бит).

ЯҢЫ РЕДАКЦИЯ

Н. Рус теленән ингән шартлы сифаттарҙың ный, ский ялғауҙарына бөткәндәре һүҙҙең тамыры йәки нигеҙ формаһында алына: Октябрьская революция—Октябрь революцияһы, реальная зарплата—реаль эш хаҡы, активная работа—актив эш, русский язык—рус теле, театральная школа— театр мәктәбе.

Иҫкәрмә. Халыҡ исемдәрен белдергән ҡайһы бер һүҙҙәрҙең ский ялғауы ҡушып яһалған шартлы сифаттар башҡортсала ике төрлө бирелә:

а) әгәр был шартлы сифат милли принциптан сығып асыҡлау мәғәнәһен белдерһә, тамыр һүҙ менән бирелә: башкирский язык—башҡорт теле, Башкирский педагогический институт—Башҡорт педагогия институты, Татарский педагогический институт—Татар педагогия институты, Совет Министров Башкирской АССР—Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы, Татарский АССР—Татар АССР-ы, Башкирский Государственный академический театр—Башҡорт Государство академия театры;

б) әгәр был шартлы сифат территория ягынан асыҡлау мәғәнәһен белдерһә, стан ҡушып яһалған нигеҙ һүҙ менән бирелә. Башкирская контора Государственного банка — Государство банкыһының Башҡортостан конторалы, Башкирское отделение Всесоюзного общества по распространению политических и научных знаний—Политик һәм фәнни белемдәр таратыу Бөтә Союз обществоһының Башҡортостан бүлеге.

ИҪКЕ РЕДАКЦИЯ

О. Цифрҙар һуңында килгән рәт һаны ялғауҙары дефис аша сы, се, сө формаһында яҙылалар: 5-се, 6-сы, 100-сө, 3-сө.

ЯҢЫ РЕДАКЦИЯ

О. Цифрҙар һуңында килгән рәт һаны ялғауҙары дефис аша сы, се, сө формаһында яҙылалар: 5-се, 6-сы, 100-сө, 3-сө.

ИҪКЕ РЕДАКЦИЯ

Иҫкәрмә. Рим цифрҙары һәм датаны белдергән ғәрәп цифрҙары һуңында рәт һаны ялғауы яҙылмай: 1940 йыл 5 февраль, V бүлек. (22-се бит).

ЯҢЫ РЕДАКЦИЯ

Иҫкәрмә. Рим цифрҙары һәм датаны белдергән ғәрәп цифрҙары һуңында рәт һаны ялғауы яҙылмай һәм дефис ҡуйылмай:

1940 йыл 5 февраль, 1949 йылдың 23 мартында, X класс, V бүлек.

Социализмдең бөтә фронт буйынса киңәйтелгән һөжүме съезы

(ВКП(б)-ның XVI съезы асылыуға 21 йыл тулыуға ҡарата)

1930 йылдың 26 июнендә Мәскәүҙә ВКП(б)-ның XVI съезы үҙенең эшен башланы. Иптәш Сталин әйткәнсә, ул партия тарихына «социализмдең бөтә фронт буйынса киңәйтелгән һөжүме, кулактарҙы синыф булыу яғынан бөтөрөү һәм тотош коллективлаштырыуҙы тормошҡа ашырыу съезы» булып инде.

XV съезд менән XVI съезд тиклемге, ике йыл ярым ваҡытты үҙ эсенә алған осор капиталистик донъя өсөн дә, шулай уҡ СССР өсөн дә боролош осоро булды.

Капиталистик илдәр өсөн был экономик яҡтан түбән төшөүгә боролош осоро булды. Капиталистик донъя экономик кризис менән солғап алынды, ул промышленноста ғына түгел, бәлки ауыл хужалығына ла таралды. Был 1914—1918 йылдарҙағы бөтә донъя һуғышынан һуңғы, капитализмдең бер ни тиклем стабилизацияһының бөтөүен аңлатыусы беренсе экономик кризис булды.

СССР өсөн был ҡеүәтле экономик күтәрелеш яғынан боролош осоро булды. Советтар Союзы халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу осоронан уны реконструкциялауға күсте. Илебеҙҙә гигант кимәлдә социалистик төҙөлөш йәйелдерелде. Бөтә халыҡ хужалығын ҡайтадан ҡоралландырыуға булдырылған ауыр индустрияға нигеҙ һалынды. Ауыл крәҫтиәндәренең колхозға массовый инеүҙәре башланды. Партия һәм хөкүмәтебеҙ колхоз һәм совхозларҙың үҫеүе айҡанлы 1929 йылдың аҙағында кулактарҙы ҡыҫырыҡлап сығарыу политикаһынан уларҙы тотош коллективлаштырыу базаһында синыф булыу яғынан бөтөрөү политикаһына ныҡлы боролош яһаны. Ошо уҡ осорҙа социалистик төҙөлөштөң беренсе биш йыллыҡ планы ҡабул ителде. Партия хеҙмәтсәндәрҙе беренсе биш йыллыҡ планды үтәүгә мобилизацияланы.

Съезд ВКП(б) Үҙәк Комитетының политик һәм ойоштороу отчетын, промышленность тарафынан беренсе биш йыллыҡ планды үтәлеше мәсьәләһен, колхоз хәрәкәте, профсоюздарҙың бурыстары тураһындағы һәм башҡа мәсьәләләрҙе тикшерҙе.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының отчет докладын менән иптәш Сталин сығыш яһаны. Партияның бөйөк юлбашсыһы халыҡ-ара обстановкаға һәм Советтар Союзының эске хәленә фәнни анализ бирҙе, социализмдең капиталистик элементтарға бөтә фронт буйынса киңәйтелгән һөжүменең асылын асты, беренсе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү эшендә партияның һәм Совет государствоһының бурыстарын күрһәтте. СССР-ҙа социалистик төҙөлөштөң практикаһын һәм тәжрибәһен гениаль дөйөмләштереп, илебеҙҙә булып үткән социаль-экономик үҙгәрештәрҙе күрһәтте һәм беҙҙең илебеҙ социализм осорона инде, тип билдәләне. Иптәш Сталиндең докладында партияның мөһим программа документы булды, ул хеҙмәтсәндәрҙе алға хәрәкәт итеүҙең асыҡ программаһы менән ҡоралландырҙы.

* * *

Капиталистик донъяны солғап алған донъя экономик кризисе, тип күрһәтте иптәш Сталин үҙенең докладында, капиталистик донъяны периодик тетрәтеүсе ғәҙәттәге кризис булманы. Был экономик кризис капитализмдең беренсе империалистик һуғыш осорона бәрелеп килгән дөйөм кризисе базаһында йәйелеп китте.

Империалистик һуғыш һәм уның һөҙөмтәләре капитализмдең сереүлегең көсәйттә һәм уның тигеҙлеген ҡаҡшатты. Капитализм донъя хужалығының берҙән-бер системаһы булыуҙан туҡтаны. Донъя ике системаға — серей бөткән капитализм системаһына һәм үҫә барған социализм системаһына бүленде.

Йәйелеп киткән экономик кризис, тине иптәш Сталин, бығаса тиклем булған донъя экономик кризистәре араһында иң серьез һәм иң тәрән кризис булды. Ул бөтә капиталистик илдәрҙе солғап алды һәм капитализмдең бөтәһенән дә көслө илен, уның цитаделен — Америка Ҡушма Штаттарын солғап алды.

Ҡатмарлы халыҡ-ара обстановкала Совет хөкүмәте һуғыш тоҡандырыусыларҙы фаш итте һәм тыныслыҡ политикаһында бик ныҡ торҙо. «Беҙҙең политикабыҙ, — тине иптәш Сталин, — тыныслыҡ политикаһы һәм бөтә илдәр менән сауҙа бәйләнештәрен нығытыу политикаһы ул» (Әҫәрҙәр, XII том, 260-сы бит).

Капиталистик илдәрҙә, тип күрһәтте иптәш Сталин, экономик кризис, эшһеҙлек, хеҙмәтсәндәрҙең материаль хәлдәренең насарайыуы, забастовкаларҙың үҫеүе, милли мәсьәләнең ҡырҡыулашыуы дауам итә. Шул уҡ ваҡытта СССР-ҙа, киреһенсә, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында ла производство үҫә, хеҙмәтсәндәрҙең материаль хәле күтәрелә, милли туғанлыҡ нигеҙҙәре нығый.

Иптәш Сталин үҙенең докладында, социалистик төҙөлөштөң капиталистик төҙөлөшкә ҡарағанда, өҫтөнлөктәрен тәрән нигеҙләй. СССР-ҙа власть башында эксплуататорҙар түгел, ә хеҙмәтсәндәр. Бында бөтә общественный байлыҡты барлыҡҡа килтереүселәр тора. Производство ҡоралдары һәм средстволары — ер, фабрикалар, заводтар — халыҡ ҡулында. Производствоның үҫеүе хужалыҡ тормошона планлы етәкселек итеү һәм хеҙмәтсәндәрҙең материаль һәм культура кимәлдәрен систематик күтәреү принцибына буйһондоролған. СССР-ҙа производство анархияһы, экономик кризистар һәм капитализмдең башҡа социаль бәләләре бөтөнләйгә бөтөрөлгән. СССР-ҙа милли доход хеҙмәтсәндәрҙең материаль һәм культура хәлен систематик күтәреү һәм ҡалала һәм ауылда производствоны киңәйтеү интересында бүленә.

Бөйөк Ватан һуғышы, социалистик хужалыҡ системаһының капиталистик системаға ҡарағанда бөйөк өҫтөнлөктәрен асыҡ күрһәтте. Һуғыштан һуңғы осорҙа социалистик хужалыҡ системаһы государствобыҙға һәм халҡыбыҙға экономика һәм культура төҙөлөштәренең шундай мәсьәләләрҙе хәл итергә мөмкинлек бирҙе, ул бер генә капиталистик илдең дә ҡулынан килмәй.

Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре, тине иптәш Сталин, ауыр хәлдән сығыу юлын капиталистик эксплуатацияға һәм һуғыш ҡурҡыныса ҡаршы көрәштән эҙләйҙәсәктәр. Иптәш Сталиндең был алдан күреүе тормошҡа ашты. Европаның һәм Азияның күп кенә илдәре капиталистик донъянан айырылды. Был илдәрҙең халыҡтары ныҡлы рәүештә социалистик үҫеш юлына аяҡ баҫтылар.

* * *

Иптәш Сталиндең докладында СССР-ҙа социалистик төҙөлөш уңыштарының грандиоз картинаһы күрһәтелде. Беҙҙең ил аграр илдән индустриаль илгә әүерелә ине.

Хеҙмәтсән массалар биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү лозунгыһын күтәрҙеләр. Партияның XVI съезы ВКП(б)-ның Үҙәк Комитетына киләсәктә социалистик төҙөлөштөң большевистик темптарын тәьмин итеү, биш йыллыҡтың ысынлап та дүрт йылда үтәлеүенә өлгәшеү бурысын тапшырҙы.

Иптәш Сталин социалистик индустрияләштереүҙең һәм халыҡ хужалығында уның номинда ҡатнаш әһәмиәтен бик ныҡ күрһәтте, СССР-ҙа промышленносте дөрөҫ урынлаштырыу проблемаһын күтәрҙе, ауыр промышленносте бөтә яҡлап үҫтереү һәм СССР-ҙың көнсығыш өлөшөндә икенсе күмер-металлургия базаһын, илдең көнсығыш районларында яңы индустрия үҙәктәрен булдырыу кәрәклеген күрһәтте. Иптәш Сталин үҙенең докладында фабрика һәм заводтарҙа социалистик ярыштың һәм массовый хеҙмәт күтәрелешенең әһәмиәтен бик ныҡ әйтеп үтте.

«Ярыштың иң күренекле нәмә шунда тора, — тине иптәш Сталин, — ул кешеләрҙең хеҙмәткә булған ҡараштарында тамырынан переворот яһай, сөнки ул, элек хурлыҡ һәм ауыр йөк тип йөрөтелгән хеҙмәтте дан эшенә, батырлыҡ һәм геройлыҡ эшенә әүерелдерә. Капиталистик илдәрҙә быға оҡшашлы бер ни ҙә булғаны юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел» (шунда уҡ, 315-се бит).

Беҙҙең илебеҙ бөтә халыҡ хужалығын социализм нигеҙендә реконструкциялау өлкәһендә өлгәшкән уңыштар үҙенән-үҙе килмәне, улар ҡыйынлыҡтарға ҡаршы хәл иткес көрәштә, уларҙы бөтөрөү өсөн серьез һәм оҙаҡ көрәштә яулап алынды. «...Синфи дошмандарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүен баҫыр өсөн һәм ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығыуға өлгәшер өсөн, — тине иптәш Сталин, — бының өсөн бер генә средство бар: капиталистик элементтарға ҡаршы **бөтә фронт буйынса һөжүм ойоштороу** һәм үҙ сафтарыбыҙҙағы оппортунистик элементтарҙы изоляциялау...» (шунда уҡ, 305-се бит).

Большевиктар партияһы, бөйөк Сталиндең күрһәтмәләренә таяныр, социализмдең бөтә фронт буйынса һөжүмен ойошторҙо һәм халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында һәм Совет иленең политик тормошонда бөйөк уңыштарға өлгәште. Большевиктар партияһы троцкизмды һәм капитализмдең уң реставраторҙарын тар-мар итте. Советтар Союзының хеҙмәтсәндәрен Ленин—Сталин байрағы тирәһенә тупланы һәм уларҙы беҙҙең илебеҙҙә социализмдең тулы еңеүенә алып барҙы.

Ауыл хужалығын социалистик реконструкциялау, ауылдағы иҫке социаль-экономик уклады ҡайтанан ҡороу һәм ауыл хужалығында капитализмды тамырынан алып йолҡоп ташлау бурысы айырыуса ауыр бурыс ине. Был бурыс коллективлаштырыу һәм кулактарҙы синыф булыу яғынан бөтөрөү юлы менән хәл ителде.

Капиталистик элементтарға ҡаршы социалистик һөжүм совет халҡын большевиктар партияһы тирәһенә тағы ла тығыҙыраҡ тупланы һәм эшселәр синфының крәҫтиәндәр менән союзын нығытты. Колхоз крәҫтиәндәре Совет иленең ысын-ысынлап ныҡлы терәгенә әүерелделәр.

Илде социалистик индустриялаштырыу һәм ауылды коллективлаштырыу Совет государствоһының йөҙөн тамырынан алып үҙгәртте. Беҙҙең ил сталинсе биш йыллыҡтар һөҙөмтәһендә промышленность продукцияһының күләме буйынса Европала беренсе урынды һәм донъяла икенсе урынды алды.

Ауыл хужалығын коллективлаштырыуҙың ленинсе-сталинсе политикаһы һөҙөмтә килтерҙе: СССР-ҙың ауыл хужалығы донъяла иң алдынғы хужалыҡҡа әйләнде. Социалистик ауыл хужалығы эшсәндәре, бөтә совет халҡы менән бергә, етештереү көстәрен үҫтереүҙең грандиоз бурыстарын хәл итәләр. Тәбиғәтте үҙгәртеүҙең сталинсе планы уңышлы тормошҡа ашырыла, малсылыҡ продукцияһы йылдам темптар менән ҙурая, яңы ерҙәр һәм ауыл хужалығының культураларын үҙләштерелә.

Ленин—Сталин партияһының байрағы аҫтында, иптәш Сталин юлбашсылығында Совет иле ҙур һәм данлы юл үтте, коммунизм төҙөү бурысын уңышлы хәл итә. СССР бөтә алдынғы һәм прогрессив кешелек донъяһының башында тора, бөтә халыҡтарға яҡты социалистик тормошҡа барыу юлын күрһәтә.

О. Әбдалбакиев,
Мәжит Ғафури исемендәге тел, әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотрудниге.

Мәктәптәрҙә яңы уҡыу йылына өлгөлө әҙерләргә

(Башланғыс һәм урта мәктәп работниктәре профсоюзы өлкә комитетенең өсөнсө пленумынан)

Ошо көндәрҙә Өфөлә башланғыс һәм урта мәктәп работниктәре союзы өлкә комитетенең өсөнсө пленумы булып үтте. Пленумда Башҡорт АССР-ы мәғариф министрының урынбаҫары иптәш Хәсәнов республика мәктәптәрендә яңы уҡыу йылына әҙерлектең торошо тураһында доклад яһаны.

Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте һәм личнo иптәш Сталин йәш быуынды тәрбиәләүгә ҙур хәстәрлек күрәләр, — тине ул, — һәр йыл һайын халыҡ мәғарифы эшенә ассигнованиелар үҫә, мәктәптәр селтәре йылдан-йыл киңәйә.

Беҙҙең республикабыҙҙа ғына һуңғы ике йыл эсендә 7 йыллыҡ мәктәптәрҙең һаны 107-гә, урта мәктәптәр һаны 27-гә артты.

Ғөмүми мәжбүри ете йыллыҡ уҡыу тураһындағы законды әҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырыу, уҡыусыларҙы фән нигеҙҙәре менән ҡоралландырыу һәм уларҙы совет патриотизмы рухында тәрбиәләү мәктәптәрҙең төп бурысы булып тора. Был бурысты тормошҡа ашырыу мәктәптәрҙә яңы уҡыу йылына үҙ ваҡытында һәм өлгөлө итеп әҙерләү, уҡыусыларға һәм уҡытыусыларға нормаль эш шарттарын тыуҙырыу менән бик ныҡ бәйләнгән.

Яңы уҡыу йылын башларға, — тип дауам итте үҙенең һүҙен докладсы, — ике ай ғына ваҡыт ҡалды. Шуның өсөн һәр бер уҡытыусы, мәктәп директоры һәм профсоюз ойошмаларының етәкселәре мәктәптәрҙе 1951—1952 уҡыу йылына әҙерләү эшен йәйелдереп ебәреүгә бөтә энергияларын һалырға тейештәр.

Мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү буйынса партияның Өлкә Комитеты, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм Мәғариф министерствоһы тарафынан күп кенә ойоштороу саралары үткәрелде. Ошо йылдың 6 майында өлкә газеталарыбыҙҙа мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына өлгөлө әҙерләү буйынса республикабыҙҙың ҡалалары, райондары араһында социалистик ярыш ойоштороу тураһында Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәренең мөрәжәғәте баҫылып сыҡты.

Республикабыҙҙың бөтә хеҙмәтсәндәре лә был мөрәжәғәтте ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланылар һәм практик эшкә тотондолар. Хәҙер Өфө, Октябрьский, Черниковск ҡалаларында, Дүртөйлө, Дәүләкән, Туймазы һәм башҡа райондарҙа мәктәптәрҙе уҡыу йылына әҙерләү эше өлгөлө итеп ойошторолдо. Уларҙа ярыулыҡ материалдары әҙерләү, инвентарҙар, уҡыу әсбабтары булдырыу, шулай уҡ уҡыу йәшендәге балаларҙы иҫәпкә алыу эштәре ойошҡанлыҡ менән бара.

Ләкин күп кенә райондарҙа, мәҫәлән, Әлшәй, Абзан, Әбйәлил, Көйөргәҙе, Шишмә, Пылайыр, Учалы һәм башҡаларҙа мәктәптәрҙе 1951—1952 уҡыу йылына әҙерләү эше сиктән тыш насар хәлдә тора. Әлшәй районы буйынса 24 мәктәпкә капиталь һәм 112 мәктәпкә ағымдағы ремонт үткәрелергә тейеш булһа ла, ошо көнгә тиклем бер генә мәктәпкә лә ремонт яһалмаған.

Общественность һәм шефлыҡ итеүсе ойошмалар менән мәктәптәр араһында тығыҙ һәм эшлекле бәйләнеш булған райондарҙа мәктәптәрҙе ремонтлау эше яҡшы бара. Бындайҙар рәтенә Октябрьский ҡалаһын, Асҡын, Бәймәк һәм башҡа райондарҙы индерергә мөмкин. Юғарыла күрһәтелгән райондарҙа общественность көсө менән йыл һайын дистәләр-осор яңы мәктәп һалыу традицияға инеп китте. Был яҡшы башланғыс башҡа райондарҙа ла киң ҡулланыу тапты. Мәҫәлән, быйыл Миәкә районында 240 урынлыҡ ете мәктәп, Шаран районында ике ете йыллыҡ, 2 башланғыс мәктәп, ә Асҡын районында 4 һәм Баҡалы районында 8 яңы мәктәп һалына.

Яңы уҡыу йылына әҙерлектә дәреслектәр һәм төрлө уҡыу пособиелары булдырыу шулай уҡ ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Ләкин уларҙы әҙерләү эшенең торошон да ҡәнәғәтләнерлек тип әйтеп булмай. 1 июнгә план буйынса ҡаралған 800 мең дәреслектең 91 мең экземпляры ғына һатып алынған. Был тәңгәлдә китап менән сауҙа итеүсе ойошмалар (бигерәк тә Ҡыйғы, Стәрлетамаҡ райондарында) дәреслектәрҙе потребителдәргә еткереүҙә ғәмһеҙлек күрһәтәләр, китап һатыуҙан файҙа аҙ, тип кенә ҡарайҙар. Китап менән сауҙа итеүсе ойошмаларға быны государство әһәмиәтендәге эш икәнлеген аңларға ваҡыт инде.

Мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләүҙә уларҙы ваҡытында яғыулыҡ материалдары менән тәьмин итеү мәсьәләһе лә ҙур урын тота. Ләкин был эштә байтаҡ ҡына райондар түбән тора алмаслыҡ яуаплыһыҙлыҡ күрһәтәләр. Мәҫәлән, Борай районында тейешле булған 3.500 кубометр утындың ни бары 170 кубометры ғына, Учалы районында 7.362 кубометрҙың 500 кубометры ғына мәктәптәр эргәһенә ташылып ҡуйылған. Белокатай, Оло Теләк, Красноусол һәм Бөрө райондарында ла ошондай уҡ хәл.

Мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү партия һәм совет ойошмаларының көн үҙәгендә торған мөһим бурыстарынан һанала. Республикала мәктәптәрҙе 1951—1952 уҡыу йылына әҙерләүҙә ярҙам итеү буйынса иғлан ителгән айлыҡ бөтөргә һанаулы ғына көндәр ҡалды. Ошо ҡалған ваҡыт эсендә бөтә көстө һәм энергияны һалып эшләргә һәм мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына өлгөлө итеп әҙерләүгә өлгәшергә кәрәк.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа 20 кеше ҡатнашты.

Пленум мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү эшен яҡшыртыу буйынса конкрет ҡарар ҡабул итте.

ЯҢЫ КИТАПТАР

Башҡорт государство нәшриәтенән һуңғы көндәрҙә башҡорт телендә түбәндәге китаптарҙы баҫып сығарҙы:

А. В. Мишулин «Борынғы донъя тарихы» 5 — 6 кластар өсөн дәреслек, тәржемәселәре И. Хафизов, М. Хәкимов һәм Ғ. Ғүмәров, тәржемәнең редакторы А. Ғиматов, күләме 268 бит, тиражы 20 мең дана, хаҡы 3 һум 50 тин.

Б. А. Тетюрев «Ботаника» урта мәктәптең 5 — 6 кластары өсөн дәреслек, тәржемәнең редакторы М. Хәкимов, күләме 220 бит, тиражы 15 мең дана, хаҡы 4 һум.

М. Ю. Лермонтов «Бородино», тәржемәнең редакторы З. Бишева, күләме 14 бит, тиражы 5 мең дана, хаҡы 50 тин.

Октябрьский ҡалаһын төҙөүселәрҙең берәһе номерлә төҙөлөш управлениеһе эшселәре намыҫлы хеҙмәт иҫәбенә күрһәтәләр.

Һүрәттә: ташсы Т. А. Терегулова эш сәғәтендә. Ул көн дә бер ярым—ике норма бирә.

А. Черванинский фотоһы.

Ауыл менән ҡала араһындағы айырма юғала бара

Беҙҙең колхозға электр яҡтылығы ғына түгел, ә яңы культура алып килде. Һәр өйҙә Ильич нурҙары балҡый. [illegible]

[illegible]

[illegible] партияһы һәм юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға айырыуса ҙур бурыслыбыҙ.

А. Балабанова,
Бөрө районы «Ленинский Октябрь» колхозының юғары урожай үҫтереү мастеры.

Октябрьскийҙан хаттар

3. Секундтарҙы тойоу

Белландиновтар семьяһын яҡын белмәүсе кешеләр Ҡасим ағайҙың һәм Хәзирә апайҙың тормошҡа ҡараштары ике яҡҡа китә, уларҙың эше менән төрлө теләк етәксеһе итә, тип уйлауҙары мөмкин ине. Бораулаусы семьяһының һөйләшеүҙәрендә төп тема нимә булыуы мөмкин? Ятенсе семьяһында итек, ботаник семьяһында сәскә тураһында күберәк һөйләшкән кеүек үк, унда ла, әлбиттә, буровой.

Ҡаҡсараҡ, ҡоңсарәк йөҙлө, тыныс ҡарашлы ир һәм ҡара күҙле урта йәштәрҙәге, ҡәнәғәт һәм шатлыҡлы йөҙлө ҡатынды тыңлағас, был шик тарҡала.

Бораулаусы тормошонда нефть вышкалары юғары күтәрелеүсе үҫеп билдәләре кеүек иналәр. Үҙенең балаһына тыныс ҡарай алмаған әсә кеүек үк, ул буровойына тыныс күңел менән ҡараған бер генә нефтсе лә юҡ. Бораулау мастеры вышканы «йәшә» еткәнгә, долото девонды тойғанға һәм һөрө ҡуйы шыйыҡлыҡ шаулап һәм бышылдап юғарыға атылғанға тиклем тәрбиәләп, уның артынан йөрөй. Ул шул саҡта ғына елкәһенән ауыр йөк алып ташлаған кеше кеүек, үҙендә еңеллек тойоп, тәрән һулай.

Тантана көнөндә, промысла контораһынан булған талапсан кешеләр, бораулаусылар ҡулынан яңы скважина ҡабул итеп алғанда, Белландинов күңелендә оҙатыу һәм айырылышыу ваҡытында ғына була торған тын яманһыулыҡҡа оҡшаған ғәжәп тойғо тыуа ине. Ғәҙәттә тыныс мастер, промысловиктарға:

— Ҡабул итегеҙ, ләкин бында күп көс ҡалынғанлығын хәтерегеҙҙә тотоғоҙ, һаҡлағыҙ! — ти.

Һуңғы йылдарҙа мастер Белландинов ундарса скважиналарға тормош бирҙе, ләкин улар осраҡлы осрашыуҙар кеүек, хәтерҙән юғалмаһылар. Улар теге көндәрҙең киҫерештәрен һәм тулҡынланыуҙарын хәтерҙә яңыртып, йәшәүҙәрен дауам итәләр. Ул долотаның ергә инә башлаған көнөн, сәғәтен, торбаларҙың һеңдереү зоналарына эләккән саҡтары ҡурҡыныслы минуттарҙы, күҙ асҡыһыҙ ҡар буранларын, ҡоштар осоп барғанда үлерҙәй һыуыҡ таңдарҙы, ундарса квадрат километрҙарҙы баҫҡан яҙғы һыуҙар ташҡынын хәтерләй.

Шул уҡ ваҡытта Белландинов ҡатыны Хәзирә апай башҡаларға бөтөнләй икенсе төрлө ҡарағандай тойола. Ул, мәҫәлән,

— 514-се скважинанан һуң тыҙыбыҙҙы кейәүгә бирҙек.., тип һөйләй.

477-се вышка байрам менән бәйләнешле, ул:

— Премия алғас, ҡунаҡтар саҡырҙыҡ, әҫ күп ҡунаҡ булдыҡ. Өҫтәл тирәләп, 120 кеше ултырҙы, — тип хәтерләй.

Мастер Белландиновтың нефтселәрҙең Бөтә Союз съезына барыуы тураһында былай һөйләй:

— Ул Бакуға — 236-сы скважинаны бораулағас китте.

Ләкин шулай ҙа был кешеләрҙе яҡындан торып белгәс шик юғала. Был ябай семья Башҡортостан нефтененең сәскә атыуы тураһында хәстәрлек, дөйөм интерес менән йәшәй.

...Был бер нисә йыл элек булды. Бораулау конторағы Белландиновҡа алыҫ майҙанда тәрән скважина бораулауға ҡушты. Яҙ көнө бораулаусылар болонда, тимер юлының артында, эшкә керештеләр.

Тәжрибәле мастер тауға көндәрҙә ныҡ тынысһыҙланды. Бригаданың яңы членәрҙә тиҙләтелгән бораулау темптарын үҙләштерә алмаһылар, ә ҡайһы берҙәре бөтөнләй төләмәселәр. Ҡасим ағай бөтә кешеләрҙең дә ихтыярын бергә ҡуша алмаһа, уларҙы уңышһыҙлыҡ көтә икәнен асыҡ аңланы.

Бораулау мастеры яңы эшселәрҙе түҙемһеҙлек менән өйрәтә башланы. Был ауыр көндәрҙә уны станок һәм насос эргәһендә, ул ҡатлы өй бейеклегендәге вышка башында, лебедка янында күрергә мөмкин ине. Үҙенең энергияһы, тиҙ хәрәкәттәре менән ул кешеләрҙә ярыш уты тоҡандырҙы. Бораўҙәргә ағымлы һүҙҙәр менән ярҙам итте, икенселәрҙең эшләүен талап итте. Был талап көндән-көн күтәрелә барҙы.

Ул көндәрҙә Октябрьский тиҙлектәр менән йәшәне. Һәр көндең ауыҙында метрҙар һәм секундтар булды. Иван Куприянов, Павел Балабанов даны яңыраны. Улар алға киттеләр, тиҙлек өсөн ярышта уларҙы ҡыуып етеү ауыр булыр төҫлө тойолдо.

Эшселәр үҙҙәренең бындай шиклләнеүҙәрен әйткән саҡта, бораулау мастеры Белландинов:

— Беҙ уларҙы уҙып китә алабыҙ. Секундтарҙы һаҡларға өйрәнергә кәрәк, — ти ине.

Күтәреү-төшөрөү эштәре ваҡытында бораулау мастеры, йә бораулаусыны, йә уның ярҙамсыһын, йә верховойҙы алыштырҙы, нисек тиҙ эшләргә, бәләкәй механизацияны нисек бөтөн тиҙлеге менән файҙаланырға күрһәтте. Эшселәр уның хәрәкәттәренең етеҙлегенә ғәжәпләнделәр, дөйөм темпҡа инә барҙылар. Һәм 1900 метр торбаны, 48 сәғәт урынына, 20 сәғәттә төшөрөргә өлгәшкәс, эшселәр үҙҙәренең көстәренә ышандылар.

Ҡасим ағай өсөнсө көн иңдә өйгә ҡайтманы. Ул буровойҙы ташлап китә алманы. Бригаданы берләштереү өсөн ныҡышмалы көрәш бара ине. Дүртенсе көндөң иртәһендә Хәзирә апай ирене шылтыратты:

— Буровойыңды бер нисә сәғәткә ҡалдырып китә алмайһыңмы ни?

Алтынсы көнөнә ул иренә үпкәле һүҙҙәр әйтте:

— Мин беләм, һин семьяңды бөтөнләй онотҡон.

Өсөнсө көн иртән ул буровойға һыйыуы менән килде. Ул дөйөм төрмөш менән йәшәй башланы — белем йыуҙы һәм бригаданы аңлатты. Эшселәрҙең ҡатындары менән бәйләнешеп тотто. Уның килеүе былды, культбудканың нәҙек ялтыраһ китте, өҫтәлдә сәскәләр күренде.

Хәҙер кешеләр бер-береһенә күберәк ҡараныйлар, ышын дуҫлыҡ башланды. Был көрәш — буровойҙы сроғынан алда таһшырыу менән тамамланғанын бөтәһе лә хәтерләйҙәр, бораулаусылар государствонан ҙур премия алдылар. Һәм шул саҡта Хәзирә апай «буровой киңәше» үткәреү идеяһы менән йөрөнө. Уның хылалы тормошҡа ашты — уларҙың өйөнә бөтә эшселәр ҡатындары менән килделәр, бөтә ҡунаҡтар ҙа Хәзирә апайҙың ашһыуына тейешле баһа бирҙеләр.

Бригада, бер тапҡыр үҙенең көсөнә ышаныл, башҡа бригадалар менән ярыша башланы. Улар бөтә общественностең иғтибар үҙәгенә эләктеләр, партия ойошмаһы ярҙам күрһәтә, уларҙың тәжрибәһен популярлаштыра башланы. 242-се номерлы буровойҙа Белландинов бригадаһы, тиҙләтелгән режимда эшләп, станок-айға 1002 метр тиҙлек бирҙе.

Наубәттәге 550-се номерлы буровойҙа бригада темпты түбәнәйтте; тиҙлек 614 метрҙан артманы. Партия ойошмаһы һәм инженер-техник көстәр уңышһыҙлыҡты төҙәтергә ярҙам иттеләр. Һәм 477-се буровойҙа бораулау тиҙлеге 1145 метрға етте. Был һоҡланғыс рекорд ине. 475-се номерлы скважина шулай уҡ тиҙлек менән тип әйтерлек бораулаңды. Секундтар көрәш үлсәме булып китте.

Берҙәм коллектив бораулау тиҙлеген күтәреүҙә һоҡланғыс һөҙөмтәләргә өлгәште. Әгәр 550-се буровойҙа бер долотаға уртаса проходка 14,6 метр тәшкил итһә, 477-се номерлы буровойҙа был цифр 19,6 метр, 478-се номерлы буровойҙа — 21,2 метрға етте. Был өс буровой буйынса техник тиҙлек түбәндәгесә үҫте: сәғәтенә 4,28 метр, 5,64 метр, 5,71 метр.

191-се номерлы яңы буровой киң тигеҙлек өҫтөнән күтәрелгән буш ҡалҡыулыҡтың итәгендә тора. Бында тиҙләтелгән бораулау дауам итә. Сидоренко бригадаһы апрель айында бөтә бораулаусыларҙы ла, шулар иҫәбенән Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Куприянов һәм атаҡлы бораулаусы Ҡасим Белландинов иптәштәрҙе лә уҙып китте. Ул Белландинов рекордын 11 метрға үҫтерҙе.

— Сидоренко бригадаһын ҡыуып етергә тырышасаҡбыҙ, — ти Ҡасим Белландинов, тыныс йылмайыу менән, — һиҙ тиклем ҡый бораулаһаҡ, Ватанға шул тиклем күберәк нефть бирербеҙ!

Вахталар үҙҙәренең урындарында ышаныслы торалар: станоктар һәм моторҙар тиҙ, ритмлы эшләйҙәр, долото инде 1700 метрлыҡ тәрәнлеккә киңерә.

Ярыш дауам итә...

Әнүәр Бикчәнтәев.

Башҡорт Академия театры Үзбәкстанда гастролдәрен уңышлы тамамланы

Ташкент (телеграф аша). Башҡорт государство Академия театры коллективы Совет Үзбәкстанында, туғандаш үзбәк халҡына башҡорт театры искусствоһы ҡаҙаныштарын күрһәтеү буйынса ойошторолған гастролдәрҙә уңышлы тамамланы. Республиканың эре промышленность һәм культура үҙәктәре булған Ташкент һәм Самарҡанд ҡалаларының общественносе театр коллективының сығыштарын йылы ҡаршыланы, башҡорт халҡының формаһы менән милли, йөкмәткеһе менән социалистик культураһының сәскә атыуын көүҙәләндереүсе театрҙың эшенә юғары баһа бирҙе.

Совет Үзбәкстанында бөтәһе 37 спектакль ҡуйылды.

26 июндә гастролдәрҙе тамамлап театр коллективы туғандаш Совет Татарстанының башҡалаһы Ҡазанға гастролгә юлға сыҡты.

А. Мөбәраков.

Бал ҡорттары һәм урожай

Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә (1940 йылда ине) Башҡортостан павильоны үҙебеҙҙең кустар артелдәре биҙәкләп эшләгән юҡә силәктәргә тултырылған «Башҡортостандың юҡә балы» тигән маркалы бал һатыу эшен ойоштороу менән байтаҡ дан алып ҡалғайны. Мин бегән павильондың отзыв кенәгәһенә Мәскәүҙең, Мәскәүҙең генә түгел, Бөтә Союздың бал ҡорттары буйынса данлыҡлы ғалиме яҙып ҡалдырған һүҙҙәрен иҫкә төшөрәм. Ул: «Башҡортостандың юҡә балы артыҡ шифрәтле, юғары сифатлы булыуына һәм шуның менән уның дан алыуына шик юҡ. Ләкин һеҙгә балығыҙҙы «Башҡортостан балы» тип кенә атарға һәм ошо марка менән һатырға кәрәк ине. Һеҙҙең ҡара бойҙай балы ла, донник балы ла, тәбиғи болондар сәскәһенән йыйналған балығыҙ ҙа данлы: улар иң киткес тәмлеләр, туҡлыҡлылар һәм дауалау средствоһы булалар...», тип яҙғайны.

Был дөрөҫ фекер. Беҙҙең тәбиғәте сиктәр тыш бай республика яландарында, болон һәм баҫыуҙарында, урмандарҙа, ҡабыҡлыҡтарҙа ниндәй генә сәскәле үҫемлектәр үҫмәй һуң! Уларҙың бик күбеһенең сәскәләре бал эшләү өсөн ҡиммәтле сырье — нектар эшләп сығаралар. Был төр үҫемлектәрҙең сәскәләре бөжәктәр, бигерәк тә бал ҡорттары сәскәләренән сәскәләренә ҡунып йөрөмәй торып һеркәләнә, аталана алмайҙар, шуныһы, улар яңы быуын үҫемлектәр өсөн орлоҡ бирә алмайҙар. Был үҫемлектәрҙең бөтә тормошо, орлоҡланып яңы быуын бирәүе, бал ҡорттарының эшмәкәрлек итеүҙәренә органик бәйләнгән.

Бал ҡортоноң тормошо үҫемлек тормошона әҙәкһеҙ булып бәйләнгән. Биологик үҙенсәлектәре яғынан үҫемлек бал ҡортон, ә бал ҡорто үҫемлеккә хеҙмәтләнеләр. Күп төр үҫемлектәр бал ҡортонан башҡа йәшәй ҙә алмайҙар. Шуға күрә лә бал ҡорттары үҫемлектәрҙең юғары һәм тотороҡло урожайҙарын алыуҙа иң ышаныслы ярҙамсы ролен уйнайҙар.

Бал ҡорттары бик күп үҫемлек сәскәләренең һеркәләнеүен тәьмин итәләр. Был үҫемлектәр рәтенә ҡара бойҙай, көнбағыш, горчица, рыжик, алма ағасы, груша, сейә, ҡарағат, ҡурай еләге, кәбеҫтә, һуған, кишер, сөгөлдөр, ҡыяр, ҡарбуз, ҡауын, аҫмыҡ, клевер, люцерна, күк һағыҙ һәм башҡа күп төрлө үҫемлектәр инә.

Бал ҡортоноң эшмәкәрлек көсө иҫ киткес ҙур. Һәр бер эшсе бал ҡорто бер көндә умартаһынан баҫыу һәм яландарға 30 — 40 тапҡыр осоп бара. Был ваҡытта ул 4000-гә яҡын сәскәгә ҡуна, унан нектар йыйнай. Нектар йыйнаған саҡта уның ҡорһағына, аяҡтарына һәм ҡанаттарына сәскә һеркәһенең саңдары йәбешә. Икенсе сәскәгә ҡунған саҡта был һерке саңдары ошо сәскәләге инәлек органы ауыҙсыҡҡа (рыльце) буяла һәм шуның менән сәскәләрҙең сит сәскә һеркәләренең саңдары менән һеркәләнеүе һәм аталаныуы хәл ителә. Бөйөк ғалим Ч. Дарвин бөжәктәрҙең, ошо иҫәптән бал ҡорттарының был маҡтаулы эштәрен «...оҫта буяусы мастерҙарҙың эше...», тип атаны.

Бал ҡорттарының был «...оҫта буяусы мастерҙарҙың эше...» үҫемлектәрҙең урожайын күтәреү менән генә сикләнмәй әле. Бының арҡаһында сит сәскәләрҙең һеркәһе менән аталаныусы үҫемлектәрҙең орлоҡ сифаты ла бик ныҡ яҡшыра. Дарвин сит сәскәләрҙең һеркәһе менән аталаныу үҫемлектәрҙең яңы быуынына күп көс бирә һәм был яңы быуын үҫемлектәр тормош шарттарына күп сыҙамлы булалар, тип иҫбат итте.

Дарвиндан уҡеңеһен боҙоп аңлаусылар, менделист-морганистар бал ҡорттары күп төр үҫемлектәрҙе һеркәләндерә алмайҙар, тигән зарарлы теория уйлап сығарҙылар. Был «ғалимдәрҙең» фекере буйынса, беҙҙең урындағы бал ҡорттарының моронлары ҡыҫҡа була, шуға күрә улар клевер һәм люцерна кеүек, үҫемлектәрҙең сәскәләрендәге нектарҙы йыйнай алмайҙар һәм шуға күрә улар бындай үҫемлектәрҙең сәскәләренә ҡунмайҙар икән. Был «теориянан» сығып, улар, мәҫәлән, беҙҙең башҡорт бал ҡорттарын оҙон моронло Кавказ бал ҡорттары менән аталандырыу аша яңы тоҡом ҡорттар сығарыу эше менән шөғөлләнергә тәҡдим иттеләр.

Практикала беҙ бының киреһенсә булыуын күрәбеҙ. Беҙҙең урындағы бал ҡорттары сит сәскә һеркәһе менән аталаныусы бөтә үҫемлек сәскәләрен дә һеркәләндерә алалар. Дөрөҫ, улар ҡайһы бер үҫемлек сәскәләренә артыҡ яратып ҡунмайҙар, сөнки был сәскәләрҙең сәскә япраҡтары бик еңел асылып етмәйҙәр, уны асыу өсөн бал ҡортона көс һалырға кәрәк була. Ул сәскә япраҡтары еңел һәм тиҙ асыла торған сәскәләргә яратып ҡуна. Ләкин хәҙер совет агробиология фәне бал ҡорттарын бындай төр үҫемлектәрҙең (клевер, люцерна һәм башҡалар) сәскәләренә ҡуныуға мәжбүр итә торған юлдар эшләп сығарҙы. Бының өсөн бал ҡорттарын ошо төр сәскәләргә ҡуныуға күнегеү—дрессировка үткәрелә.

Башҡортостан ауыл хужалығы институтының ғилми сотруднигы В. Ифаева бал ҡорттары ярҙамы менән урындағы башҡорт клеверҙәренең орлоҡ урожайын күтәреү буйынса бик ҡыҙыҡлы ғилми эштәр алып бара. Уның Оло Теләк районы Куйбышев исемендәге колхозда һәм Өфө тәжрибә баҫыуында үткәргән тәжрибәләре аша беҙҙең урындағы башҡорт бал ҡорттарының клевер сәскәләрен һеркәләндереүҙә иҫ киткес эш итеүҙәре иҫбат ителде. Бында бал ҡорттарын клевер сәскәләренә яратып ҡуныуға күнегеү үткәреү айырым йылдарҙа клеверҙең орлоҡ урожайын бермә-бер күтәреүен билдәләне. Шул уҡ ваҡытта, күпселек ваҡиғаларҙа, беҙҙең урындағы башҡорт бал ҡорттары клевер сәскәләрен һис бер күнегеү үткәрмәй торып тулыһынса һеркәләндерә алыуҙары иҫбат ителде. Был бигерәк тә, клевер баштары сәскә атҡан саҡта, нектар бирә торған башҡа төр сәскәле үҫемлектәр сәскә атып бөткән саҡта шулай була.

Беҙҙең боронғо урындағы клеверҙәрҙе хәҙерге урындағы бал ҡорттары ярҙамы менән һис бер күнегеүһеҙ — дрессировкаһыҙ ҙа һеркәләнә алыу мөмкинлеге иҫбат ителде. Был, бөйөк рус ғалимы К. А. Тимирязевтең алдан күреп әйткән фекерҙәре менән дөрөҫләнәләр. Ул былай тип яҙҙы: «...Әгәр ҙә ниндәй ҙә булһа, бер уҙында шмелдәр (был бөжәктәр клеверҙе һеркәләндереүҙә бик ҙур роль уйнайҙар — **В. Ғ.**) юҡ ителгән булһа, йәки уларҙың һаны һирәгәйһә, бында осраҡлы рәүештә һаҡланған клеверҙең сәскә япраҡтары ҡыҫҡа булған төрҙәрен бал ҡорттары һеркәләндергән булырҙар ине. Шулай итеп, оҙаҡ ваҡыттар үткәндән һуң, йылдан-йыл сәскә япраҡтары ҡыҫҡа булған клевер үҫемлектәре һайланып ҡалыу арҡаһында, был урында шмелдәр тарафынан түгел, бәлки бал ҡорттары һеркәләндерә алыуға яраҡлашҡан клевер төрҙәре барлыҡҡа килгән булыр ине» (К. А. Тимирязев. Дарвин теорияһы тураһында ҡыҫҡаса очерк, 1948 йыл, 80-се бит).

Бөйөк ғалимдең был фекерҙәрен, дөрөҫләй торған бик күп тәжрибә миҫалдары килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, Оло Теләк районы Куйбышев исемендәге колхозда 1949 йылда һәр бер гектарҙан 3,5 — 6 центнерға тиклем клевер орлоғо урожайы алыуға өлгәшелде. Бында бал ҡорттарының 80 проценттан артығы дрессировка үтмәгән урындағы бал ҡорттары ярҙамы менән һеркәләндереләләр. Өфө тәжрибә баҫыуында шул уҡ йылда уртаса 6,8 центнер, ә иң яҡшы участкаларҙан 12,6 центнер клевер орлоғо урожайы алыуға өлгәшелде. Бында ла урындағы бал ҡорттарына дрессировка үткәрелмәне. Һәр ике хужалыҡта ла умарталар клевер сәсеүлектәренә яҡын итеп ҡуйылдылар. Был бал ҡорттарының клевер сәскәләрен һеркәләндереүҙә эш ыраҙлығын күтәреүгә бик ныҡ ярҙам итте. Мәҫәлән, умартасылыҡ буйынса Бөтә Союз институтының беҙҙең Уралда үткәргән тәжрибәләрендә умарталарҙың клевер сәсеүлегенән төрлө алыҫлыҡҡа урынлаштырылған ерҙәрҙән түбәндәгесә орлоҡ урожайы алынды: умарталыҡ сәсеүлектән 250 метр алыҫлыҡта булғанда — 4,5 центнер, 800 — 1000 метрҙа булғанда — 2,2 һәм 1500 метрҙа булғанда — 1 центнер. Яҡын ерҙәрҙә бал ҡорттары клевер сәскәләрен күп һанда һеркәләндерәләр.

Шул уҡ тәжрибәләрҙең берәһендә бал ҡорттары һеркәләндермәгән участканың бер гектарынан 310 килограмм, бал ҡорттары ярҙамы менән һеркәләндерелгән ерҙән 740 килограмм клевер орлоғо урожайы алыныу беленгән. Был тәжрибә бал ҡорттары клеверҙең орлоҡ урожайын бермә-бер күтәреүгә ярҙам итеүен күрһәтә.

Бал ҡорттарына дрессировка һәйәу бөтөнләй кәрәк түгел тип, әйтеү дөрөҫ түгел, әлбиттә. Юғарылағы тәжрибәләр менән беҙ урындағы бал ҡорттарының клевер сәскәләрен бындай күнегеүһеҙ ҙә һеркәләндерә алыуҙарын күрһәттек. Бигерәк тә клевер иртә сроктарҙа сәскә атҡан саҡта, нектар бирә торған сәскәле үҫемлектәр клевер сәскә атыу ваҡытында сәскәләнгән ваҡытта бындай дрессировка бик кәрәк сара ул. Шул уҡ институттың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, дрессировка үткәрелгән бал ҡорттарының клевер сәскәләренә ҡуныуҙары 14 тапҡырға арта. Был сара клевер сәскәләре менән араластырып әҙерләнгән шифрәт-сироп менән бал ҡорттарын аҙыҡландырыуҙан тора. Бынан һуң бал ҡорттарын клевер сәскәләренә өйрәнә күнегеп, һуңынан улар клевер сәсеүлектәрен үҙҙәре үк эҙләп табалар һәм уның сәскәләренән нектар йыйнай башлайҙар.

Бал ҡорттары сәскәләрҙән нектар йыйнау аша уларҙы һеркәләндереп, орлоҡ урожайын күтәргән кеүек, бал урожайын да бик ныҡ күтәрәләр. Академик И. Д. Колесник ошондай ҡыҙыҡлы тәжрибәләрҙе күрһәтә. Чернигов өлкәһе «Светова зарница» колхозында 12 гектар ҡара бойҙай сәсеүлегенә умарталар сығарып ултыртыла. Бал ҡорттары ҡара бойҙай сәскәләренә бик яратып ҡуналар, нектар йыйнайҙар, һеркәләндерәләр. Һөҙөмтәлә һәр бер гектарҙан 22,4 центнер ҡара бойҙай урожайы, һәр бер умартанан 357 килограмм бал һәм 10,4 килограмм балауыҙ йыйыла.

Был тәжрибә ҡара бойҙай урожайын күтәреүҙә уны бал ҡорттары менән һеркәләндереү хәл иткес роль уйнауын күрһәтә.

Башҡортостанда оҙаҡ йылдар эшләп килеүсе агроном Голодец ошондай ҡыҙыҡлы тәжрибә һандары килтерә: ҡара бойҙай урожайын күтәреү өсөн умарталарҙы, ул сәскә атыу ваҡытында сәсеүлек янына йәки уртаһына сығарып ултыртырға кәрәк. Ул бындай ерҙәрҙә һәр гектарҙан 16 центнер ҡара бойҙай урожайы йыйнай. Умарталар ҡара бойҙай сәсеүлегенән 500 метрҙа булған ерҙән 12,8 центнер, 1000 метрҙа булған ерҙән — 9,6 центнер һәм 1500 метрҙа булған ерҙән — 6,4 центнер урожай алына. Әлшәй районында эшләүсе агроном Саламатин, донник үләне үҫкән ерҙәрҙә һәр бер умартанан 100 килограмм балды теләһә ниндәй йылда ла бик еңел йыйнап була, тип күрһәтә. Бер үк ваҡытта бал ҡорттары донниктең орлоҡ урожайын бермә-бер күтәрәләр.

Бал ҡорттары кешеләргә бына ошондай хеҙмәт итәләр. Улар—юғары урожай үҫтереүселәр. Беҙҙә умартасылыҡ эшен киңәйтеүгә бөтә мөмкинлектәр бар. Һәр бер колхоз юғары доходлы умартасылыҡ фермалары булдырыуға өлгәшергә тейеш.

Агроном В. Ғирфанов.

Потребкооперация системаһының эшен хеҙмәтсәндәрҙең һорауына яуап бирерлек итеп ҡуйыу өсөн

(Редакцияға килгән хеҙмәтсәндәр хаттарына күҙәтеү)

Большевиктар партияһы һәм хөкүмәтебеҙ совет кешеһе тураһында, хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күрешен яҡшыртыу һәм дөйөм культураһын күтәреү тураһында даими хәстәрлек күрә. [illegible]

[illegible]

Салауат районында йәшәүсе иптәш Д. Сафин потребкооперацияның эше тураһында редакцияға бына нәмә яҙа:

— Салауат районы Таймый сельпоһының II Иҙелбай ауылындағы 3-сө номерҙә бүлексәһе күп ваҡыт бикле була. Сөнки уның һатыусыһы Рәжиә Яруллина эш сәғәтенең күп өлөшөн үҙенең өйөндә үткәрә. Шул арҡала колхозсылар эш ваҡытында үҙҙәренә кәрәкле тауарҙарҙы күрше ауылдағы магазиндан барып алырға мәжбүр булалар. Был бүлексәнең ошолай насар эшләүенә Таймый сельпоһының председателе Хәпов һәм ревкомиссия председателе Мөхәмәтов иптәштәр

[illegible]

Потребкооперация системаһының эшен хеҙмәтсәндәрҙең һорауына яуап бирерлек итеп ҡуйыу [illegible]

[illegible] ло һәм үҙел работниктар менән тәьмин ителеүенә тығыҙ бәйләнгән. Шулай уҡ алдағы эшләүсе магазиндарҙың, алдынғы сауҙа работниктарының тәжрибәләрен киң таратыу һәм бер үк ваҡытта үҙҙәренә йөкмәтелгән эшкә яуапһыҙ ҡараусы, потребителдәрҙең һорауы менән иҫәпләшмәүсе работниктарҙы ҡаты тәнҡит уты аҫтына алыу эште арҙабан яҡшыртыуҙа ҙур роль уйнай.

Башпотребсоюз етәкселәре үҙҙәренең түбәнге звеноларының эшмәкәрлегенә даими контроллек итергә һәм уларға эште яҡшыртыуҙа яҡындан тороп ярҙам күрһәтергә тейештәр.

ФУТБОЛ

„Спартак“ командаһының еңеүе

25 июнда, Өфөнөң «Динамо» стадионында РСФСР беренселеге өсөн Свердловск ҡалаһының «Авангард» командаһы менән Өфөнөң «Спартак» командаһы осрашты. Матч ҡыҙыу темп менән башланып китте.

Спартаксылар тәүге таймдан уҡ инициативаны үҙ ҡулдарына алып, матчтың беренсе минутынан уҡ иҫәпте астылар. Беренсе таймда улар ҡунаҡтар ҡапҡаһына дүрт туп индерҙеләр. Дүрт туптың өсәһен «Спартак» командаһында беренсе башлап уйнаусы В. Фоломеев индерҙе.

Икенсе тайм тағы ла көслөрәк барҙы. Өфө командаһына иҫәпте тағы ла бергә арттырыуға «Авангард» командаһы үҙе ярҙам итте. Уның защитнигы көслө удар менән үҙ ҡапҡаһына тупты үҙе тибеп индерҙе.

Матч тамамланыу алдынан ғына ҡунаҡтар «Спартак» командаһы ҡапҡаһына бер туп индерҙеләр.

Был осрашыу 5:1 иҫәбе менән «Спартак» командаһы файҙаһына тамамланды.

И. Гершов.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Бәләбәй. Райондың ете йыллыҡ мәктәптәрендә быйылғы уҡыу йылы уңышлы тамамланды. Уҡыусылар Глухов станцияһы эргәһендә асылған санаторийҙа һәм пионер лагерҙарында ял итәләр. Уларҙа бөтәһе 400-ҙән артыҡ бала ял итәсәк.

Бынан башҡа туристик походтар, экскурсиялар ойошторола.

Бик күп уҡыусылар Октябрьский ҡалаһына экскурсияға барғанлар. Ө Аксаков урта мәктәбе коммунизмдың бөйөк төҙөлөшө — Куйбышев гидроэлектростанцияһына экскурсияға барыуҙы планлаштырҙы.

Н. Абдуллин.

***

Өфө тимер юлының баш кондукторҙары Ғәлиәхмәтов, Хәкимов, Гаврилов, Енякеев иптәштәр үҙҙәрен поездарҙы тиҙ үткәреү мастерҙәре итеп таныттылар. Был алдынғы кондукторҙар поездарҙың 90 процентен социалистик путевка буйынса оҙаталар. Улар бөтә вагондарҙың тулыһынса төҙөк булыуын гарантиялайҙар.

Ошо көндәрҙә иптәш Ғәлиәхмәтов оҙатҡан составтың бер вагонында һауа магистраленең эсәге шартланы. Ләкин ул юғалып ҡалманы. Ваҡытында тейешле сара күреп, поездың ваҡытында станцияға барыуын тәьмин итте.

Д. Егоров.

***

Ҡандра. Район колхоздары төҙөлөш эштәрен көндән-көн киң йәйелдерәләр.

Хәҙер күпселек ауыл хужалығы артелдәрендә общественный малдар өсөн яңы стандарт торлаҡтар төҙөлә.

Ошо көндәрҙә Молотов исемендәге колхозда 40 баш ат һыйҙырышлы торлаҡ төҙөлеп, ул эксплуатацияға тапшырылды. Һыйырҙар өсөн булған таш торлаҡты һалыу ҙа тиҙ көндә тамамланасаҡ.

Калинин, Ленин, Мичурин исемендәге һәм «Игенсе» колхоздарында ла төҙөлөш эштәре яҡшы бара.

М. Сәләхов.

***

Бөрйән районы Киров исемендәге колхоздың дегет ҡайнатыу производствоһына Зәйнетдинов Ғибәҙәй бабай етәкселек итә. Колхоз былтыр 8 тонна дегет етештерҙе һәм 2500 һум доход алды. Быйыл уның доходы тағы ла артасаҡ. Хәҙер 5 тонна дегет ҡайнатылды ла инде.

Д. Юлмөхәмәтов.

***

Күгәрсен районы Сталин исемендәге эреләтелгән колхоз (председателе иптәш Хәлитов) локомобиль һатып алып, электр станцияһы төҙөй башланы. Бында иптәш Романов етәкселегендә махсус бригада эшләй. Станция быйыл 20 августа эксплуатацияға тапшырыласаҡ.

Х. Дәүләтшин.

***

Баймаҡ районында дүртенсе йыл инде инкубатор станцияһы эшләп килә. Ул Баймаҡ, Матрай һәм Әбйәлил районларын хеҙмәтләндерә. Станция ошо йылдың бер айында ғына 53.410 себеш сығарып, шуларҙан 26 мең себешты Баймаҡ, 4366-һын Матрай, 2 мең себешты Әбйәлил районларының колхоздарына ебәрҙе.

И. Зарипов.

***

Йомағужа. Кәшәлә хуторында йәшәүсе Ғ. Надршинға 68 йәш. Хуторҙа ул иң ҡарт һунарсылар(ҙан) һанала.

Иптәш Ғ. Надршин үҙенең һунарсылыҡ итеү осоронда 123 айыу, 7 бүре, 1566 һыуһар, 268 төлкө, 1670 тейен һәм башҡа йәнлектәр тотоуға өлгәште.

Уның тотҡан йәнлектәренең дөйөм һаны 3600-гә етә.

И. Кәлимуллин.

***

Ит тапшырыуҙа ярты йыллыҡ планды республика малсылыҡ совхоздары 111,5 процентҡа үтәнеләр. Байрамғол, Бәләбәй һәм Арслан совхоздары был эштә айырыуса ҙур күрһәткестәр бирҙеләр. 7 совхоз государствоға йөн тапшырыу планын үтәне.

Б. Кочетков.

Чехословакия республикаһында тыныслыҡты яҡлап халыҡ тауыш бирә. Республика халҡы тыныслыҡты яҡлау бюллетендәренә бер көндән ҡул ҡуя.

Һүрәттә: Кох-и-Нор заводының ударнигы орденле Карел Чермак бюллетенгә ҡул ҡуя.

Чехопресс фотоһы.

(ТАСС фотохроникаһы).

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик Федерацияһы исполкомы сессияһының эше тамамланыу айҡанлы Софияла митинг

СОФИЯ, 25 июнь. (ТАСС). 25 июнда кис Софияла, 9 сентябрь майҙанында, Георгий Димитров мавзолейе янында хеҙмәтсәндәрҙең тыныслыҡты яҡлауға һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик Федерацияһы исполкомы 5-се сессияһының эше тамамланыуға арналған ғәйәт ҙур митингеһе булды. Бөтә прогрессив кешелектең гениаль юлбашсыһы, тыныслыҡтың бөйөк байраҡсыһы И. В. Сталин портреттары, Г. Димитров, В. Червенков, шулай уҡ Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар хәрәкәтенең күренекле деятелдәренең портреттары менән биҙәлгән ҙур майҙанда тыныслыҡ өсөн унар меңләгән көрәшсе йыйналды. Митингкә килеүселәрҙең бөтәһе лә майҙанға һыйыша алманы. 200 мең самаһы кеше майҙан тирәһендәге бөтә урамдарҙы, тыҡрыҡтарҙы, бульварҙарҙы тултырҙы.

Митингене Болгария демократик ҡатын-ҡыҙҙары комитетының председателе Цола Драгойчева асты, ул Болгарияның бөтә ҡатын-ҡыҙҙары исеменән исполком члендарын ҡотланы.

МДФЖ председателе Эжени Коттон, совет ҡатын-ҡыҙҙары антифашистик комитетының председателе Н. Попова, Испания коммунистар партияһының генераль секретаре Долорес Ибаррури, Ҡытай Халыҡ Республикаһының вәкиле Ли Дэ-чуань, Америка-Англия интервенттарының Кореялағы йыртҡыслыҡтарын тикшереү буйынса МДФЖ комиссияһының председателе Нора Родд, тыныслыҡтың халыҡ-ара Сталин премияһы лауреаты Пак Ден Ай һәм исполком сессияһында башҡа ҡатнашыусылар митингелә телмәрҙәр менән сығыш яһанылар.

Митингелә ҡатнашыусылар БМО Генеральный Ассамблеяһының председателенә ҙур күтәренкелек менән, бер тауыштан хат ҡабул иттеләр.

Болгария халыҡ республикаһы башҡалаһы хеҙмәтсәндәренең МДФЖ исполкомының 5-се сессияһының ултырыштары тамамланыу айҡанлы саҡырылған күп меңләгән кеше ҡатнашлығындағы митингеһе, тип әйтелә был хатта, сессия тарафынан ҡабул ителгән мөрәжәғәтте һәм резолюцияларҙы тулыһынса яҡлай.

Асыу һәм нәфрәт менән тулы булараҡ, беҙ, азатлыҡ һөйөүсе һәм демократик Кореяла Америка-Англия интервенттары БМО флагы аҫтында ҡасанға тиклем үлтерәсәктәр һәм баш-баштаҡлыҡтар яһаясаҡтар, тип һорайбыҙ.

Беҙ Корея мәсьәләһен тыныс юлға һалыу тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советының тәҡдимдәрен ҡабул итеүҙе һәм Америка генералдары Макартур һәм Риджуэйҙе халыҡ-ара судҡа биреүҙе талап итәбеҙ. Был генералдар етәкселегендә Корея ҡатын-ҡыҙҙарын, балаларын һәм бөтә Корея халҡын систематик юҡ итеү үткәрелә.

Үҙенең председателе Эжени Коттон йөҙөндә МДФЖ-ның 5-се сессияһының делегаткаларын ҡотлап, София хеҙмәтсәндәре, сессияла ҡабул ителгән мөрәжәғәт һәм ҡарарҙар донъялағы бөтә илдәрҙең бөтә намыҫлы гражданкаларына еткереләсәк һәм бөтә прогрессив кешелекте тыныслыҡ өсөн, тәләһә ниндәй агрессияға һәм агрессорҙарға ҡаршы тағы ла ҡыйыуыраҡ көрәшкә мобилизовать итәсәк, тип ышаныс белдерәләр. Беҙ, тыныслыҡты яҡлаусылар эшмәкәрлеге биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөүгә килтерәсәк, тип ышанабыҙ. Беҙ, председатель әфәнде, МДФЖ исполкомының бишенсе сессияһының юғарыла әйтелгән документтарын БМО Генеральный Ассамблеяһының тикшереүен, БМО-ның бөтә члендарының да улар менән танышыуын һәм кешелек тарихе алдында БМО-ға йөкмәтелгән бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтәренә алыуҙарын талап итәбеҙ.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 25 июнь. (ТАСС). Корея Халыҡ-Демократик Республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһенең мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 25 июнда Халыҡ армияһының ғәскәрҙәре Ҡытай добровольцтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Америка-Англия интервенттарының ғәскәрҙәренә һәм лисынмансы ғәскәрҙәргә ҡаршы һуғышты дауам иттергәндәр.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә ҡатнашҡан совет делегацияһының Парижҙан китеүе

ПАРИЖ, 25 июнь. (ТАСС). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә ҡатнашҡан СССР сит ил эштәре министрының урынбаҫары А. Громыко етәкселегендәге совет делегацияһы 25 июнда Парижҙан самолетта осто.

Орли аэродромында делегацияны СССР-ҙың Франциялағы ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы посолы Павлов һәм Парижҙағы совет посольствоһының составы оҙатты.

Делегацияны шулай уҡ Франция сит ил эштәре министерствоһының Европа бүлеге етәксеһе Сейду әфәнде лә оҙатты.

СССР сит ил эштәре министрының урынбаҫары А. А. Громыконың Берлингә килеүе

БЕРЛИН, 25 июнь. (ТАСС). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә ҡатнашҡан совет делегацияһының етәксеһе, СССР сит ил эштәре министрының урынбаҫары А. А. Громыко 25 июнда Парижҙан Берлингә килде.

Шенефельд аэродромында А. А. Громыконы Германия Демократик Республикаһының сит ил эштәре министры Георг Дертингер, сит ил эштәре министерствоһының статс-секретаре Антон Аккерман һәм башҡа кешеләр ҡаршыланы.

Ҡаршылаған ваҡытта совет яғынан совет контроль комиссияһы председателе урынбаҫары И. Ф. Семичастнов, СССР дипломатик миссияһының етәксеһе Г. М. Пушкин һәм башҡалар ҡатнашты.

„Берлиндең еңелеүе“ тигән совет фильменең Парижда уңыш ҡаҙаныуы

ПАРИЖ, 25 июнь. (ТАСС). Парижда «Альгамбра» кинотеатрында «Берлиндең еңелеүе» (беренсе серия) тигән совет фильме ҙур уңыш менән демонстрациялана. Шәмбе көндә — 23 июнда фильмде 5 мең, ә йәкшәмбе көндә — 9 мең тамашасы ҡараны. Совет фильмен ҡарарға теләүселәрҙең күбеһе кинотеатрҙа буш урындарҙың булмауы арҡаһында уны ҡарай алманылар.

Демократик матбуғат һәм был фильмде ҡарарға өлгөргән күп кенә тамашасылар «Берлиндең еңелеүе» фильменең икенсе серияһының күрһәтелеүен талап итәләр. Франция цензураһы 2-се серияны күрһәтеүгә ҡаршы килә.

Уругвайҙа тыныслыҡты яҡлаусылар хәрәкәте

МОНТЕВИДЕО, 25 июнь. (ТАСС). Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Уругвайҙа ҡултамғалар йыйнау уңышлы дауам итә. Һуңғы ике көн эсендә тыныслыҡты яҡлауҙың милли комитеты 5 меңдән артығыраҡ яңы ҡултамға таппырылды.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ КУЛЬТУРАЛАРЫН ӨҪТӘМӘ ҺЕРКӘЛӘНДЕРЕҮ

Совет агробиология фәне һәм алдынғы тәжрибәләр ауыл хужалығы культураларын өҫтәмә һеркәләндереү урожайлылыҡты күтәреүҙә һәм сортты яҡшыртыуҙа көслө фактор булып торғанлығын күрһәтәләр.

Тәбиғәтте бөйөк үҙгәртеүсе И. В. Мичуриндең һәм академик Т. Д. Лысенконың хеҙмәттәре үҫемлектәрҙең бөтә йәшәү дәүерендә һайланыуға һәләтле булғанлыҡтарын билдәләнеләр. Ул һайланыу һәләтлеге мөһим биологик процесста — аталаныуҙа барлыҡҡа килә. Үҫемлектәрҙең был үҙенсәлектәрен урожайҙы күтәреүгә файҙаланыу өсөн, уларға һайлаума аталаныуҙы тулыһынса тәьмин итерлек шарттар тыуҙырырға кәрәк. Үҫемлектәрҙе ябалма рәүештә өҫтәмә һеркәләндереү юлы менән генә был маҡсатҡа өлгәшеп була. Сөнки үҫемлектәр һеркәләнгәндә саҡта һеркәне ни тиклем күберәк һайлап алһалар һайлаума аталаныуҙа шул тиклем уңышлы үтә.

Өҫтәмә һеркәләндереүҙең урожайҙы күтәреүҙә агротехник әһәмиәте ҙур булыуы менән бергә, ул үҫемлектең сортын яҡшыртыуға ҙур ярҙам итә. Орлоҡ тулы һәм тос була. Ә бындай орлоҡтан сыҡҡан үҫемлек көслө булып үҫә һәм юғары урожай бирә. Орлоҡтоң аҙыҡ матдәһе байтаҡ артыҡ була. Мәҫәлән, өҫтәмә һеркәләндереү үткәрелгән көнбағыштан алынған орлоҡтоң майлылығы, ябалма һеркәләндереү үткәрелмәгән ерҙең орлоғына ҡарағанда, 5-6 процент артыҡ тәшкил итә.

Өҫтәмә һеркәләндереү үткәрелгән майҙандарҙа арыш, тары, көнбағыш, люцерна һәм ҡара бойҙай сәсеүлектәрендә емһеҙ башаҡтар осрайҙар. Шуның арҡаһында урожай һиҙерлек түбән була. Атап әйткәндә, уңайһыҙ шарттарҙа һеркәләнгән арыш һәм көнбағыш баштарының емһеҙ булыуҙары 25—30 процентҡа барып етә. Шул уҡ ваҡытта колхоздарҙың баҫыуҙарында өҫтәмә һеркәләндереү үткәрелгән майҙандың урожайы гектарына 2—5 центнерға артыҡ булғанлығы күренде. Бына шуның өсөн дә алдынғы колхоздар өҫтәмә һеркәләндереү үткәреү юлы менән йыл һайын өҫтәмә урожай алып киләләр.

Өҫтәмә һеркәләндереү Башҡортостандың күп кенә колхоздарында эффектлы һөҙөмтәләр күрһәтте. Мәҫәлән, Иглин районы Соколов исемендәге колхоз 100 гектарҙан артығыраҡ майҙанда арыш сәсеүлегенә өҫтәмә һеркәләндереүҙе үткәреү юлы менән һәр гектарға өсәр центнер урожай артыҡ алды. Ылайыр районының Буденный исемендәге ауыл хужалығы артеле шулай уҡ юл менән арыш урожайын 18 процентҡа күтәрҙе. Бына был ынғай фактар хәҙер бөтә колхоздарҙа ла сәсеүлектәрҙе өҫтәмә һеркәләндереүгә мәжбүр итә. Был эш үҙ ваҡытында, яҡшы сифатлы итеп үткәрелергә тейеш.

Был сараларҙы үткәреү өсөн күп әйбе кеҫә талап ителмәй. Ике кеше бер сәғәт ваҡыт эсендә 8—10 гектар арыш сәсеүлеген өҫтәмә һеркәләндерә ала. Шул уҡ ваҡыт эсендә 6—8 гектар ҡара бойҙай һәм люцерна майҙандарын һеркәләндереп була. Бер гектар көнбағыш йәки кукурузаны һеркәләндереүгә ни бары 1—1,5 хеҙмәт көнө тотола. Шулай булғас, был эште тормошҡа ашырыу колхоздарға бик арзанға төшә.

Өҫтәмә һеркәләндереүҙе арыш, көнбағыш, ҡара бойҙай, люцерна, етен кеүек арҡыры-буй һеркәләнә торған культуралар(ҙан) башҡа, бойҙай, тары, сумиҙа һәм башҡа үҙе һеркәләнә торған культуралар өсөн дә ҡулланырға кәрәк.

Сәсеүлектәр сәскә атҡан саҡта көслө ел булһа, йәки һауа тын-тын торһа, бик эҫе булһа, бындай шарттарҙа өҫтәмә һеркәләндереүҙең әһәмиәте тағы ла арта. Был уңайһыҙ шарттар үҫемлектәрҙең сәскә атҡан ваҡытында үҙ(ҙ)легенән һеркәләнеүгә ҡамасаулыҡ итәләр, сәсеүлектәрҙең һеркәләнмәй ҡалыу ҡурҡынысын тыуҙыралар. Елһеҙ көндәрҙә һеркәләр йәғни сәскә туҙандары сәсеүлектәрҙең өҫтөнә күтәрелә алмайынса ергә төшәләр. Әгәр ҙә үҫемлек сәскә атҡан саҡта ямғыр көслө булһа, ул һеркәләрҙе йыуып ергә төшөрә. Көндәр бик эҫе булғанда сәскәләрҙең емешлек ауыҙҙары (бигерәк тә люцерна һәм ҡара бойҙай) тейешенсә асылып етмәйҙәр. Ошондай уңайһыҙ шарттарҙа ла үҫемлектәр тулы аталанһын өсөн, уларға өҫтәмә һеркәләндереү юлы менән ярҙам күрһәтеү талап ителә.

Еүеш һауалы көндәрҙә өҫтәмә һеркәләндереүҙе үткәреү өсөн ямғыр туҡтаған араны файҙаланып ҡалырға кәрәк. Был эште үҫемлектәр массовый сәскәләнгән ваҡытта ике-өс тапҡыр үткәреү тәҡдим ителә. Ябалма һеркәләндереү эшен иртәнге сәғәттәрҙә, ысыҡ киберп, эҫе башланмаҫтан алда үткәреү бигерәк тә яҡшы була. Сөнки был ваҡытта үҫемлектәрҙең һеркәләре йәшәү өсөн, ә сәскәләр һеркәләрҙе үҙенә алыу өсөн һәләтле булалар.

Арыш, ҡара бойҙай, люцерна, киндер, бойҙай, тары һәм башҡа культураларҙы һеркәләндереү йомшаҡ еүеттән ишелгән нәҙек арҡанды ике яҡ башынан ике кеше тотоп, үҫемлектәрҙе һелкетеү юлы менән үткәрелә. Сәскә атҡан үҫемлектәрҙең баштары һуҙылған арҡанға ҡағылып, һеркәләрен ҡоялар, ул һеркәләр сәсеүлектәрҙең өҫтөнә таралып икенсе сәскәләргә төшәләр. Бының өсөн 50 метр йәки унан да оҙонораҡ арҡан алырға кәрәк.

Ҡара бойҙай һәм люцерна культураларын яҡшы һеркәләндереү өсөн уларҙың сәскәләренә нығыраҡ ҡағылырға кәрәк. Шуның өсөн арҡанға сыбыҡтар, миндектәр бәйләргә йәки 20—30 сантиметр киңлектәге оҙон сепрәк тегергә тәҡдим ителә. Көнбағышты өҫтәмә һеркәләндереү өсөн йомшаҡ буҫтауҙан, бәрхәттән йәки ҡуян тиреһенән бейәләй тегелә. Ул көнбағыш башы ҙурлығында, түңәрәк һәм өҫкө ҡаты йомшаҡ, шул уҡ ваҡытта ҡулайлы була. Бейәләй ул ҡулға кейелә һәм рәт араһы менән барып көнбағыш баштарына алмашлап тигеҙелә, һөртәлә барҙыла. Шул саҡта бер көнбағыштағы сәскә туҙандары икенсе көнбағыш сәскәһенә күсерелә. Был эш 2-3 көн аралаш 2-3 тапҡыр үткәрелә.

Ҡара бойҙай һәм көнбағыш сәсеүлектәренең сәскәләрендә бал (нектар) була. Бал ҡорттары шул балдарҙы сәскәләрҙән-сәскәләргә осоп йыйнағанда үҫемлектәрҙе һеркәләндереүгә бик ныҡ ярҙам итәләр. Шуның өсөн был культуралар сәскә ата башламаҫтан алда: көнбағыштың һәр бер гектарына 1—1,5 умарта, ҡара бойҙайға 1,5—2 умарта иҫәбенән бал ҡорттары сығарырға кәрәк.

Кукурузаға ла, арыш һәм башҡа культураларҙы һеркәләндергән кеүек, оҙон арҡанды сәсеүлектең өҫтөнән йөрөтөп сығыу юлы менән өҫтәмә һеркәләндереү үткәреп була. Ләкин, эффектлерәк булһын өсөн, түбәндәгеcе эшләү талап ителә. Кукуруз сәскәләренең емешлеге ауыҙҙары массовый рәүештә өҙгәрә башлағас, яҡшы булып үҫкән һеркәләр биҙрәгә, ҡағыҙҙан эшләнгән ҡап йәки махсус һеркәләндергескә йыйыла. Ошо юл менән йыйналған һеркәләр, йомшаҡ йөндән эшләнгән щетка менән, кукуруз сәскәһенә һөртөлә, күсерелә. Кукурузаға ябалма һеркәләндереүҙе үткәреү өсөн махсус һеркәләндергес бигерәк тә яҡшы була. Һеркәләрҙе йыйнау һәм һеркәләндереү эше иртә менән, ысыҡтар киткәс, эҫе төшмәҫ борон үткәрелә.

Өҫтәмә һеркәләндереүҙе ваҡытын үткәреп ебәрмәҫ өсөн һәр бер участкаға сәселгән культураларҙың сәскә ата башлауын күҙәтеп торорға кәрәк.

Агроном **М. Меланов.**

ӨФӨ ҠАЛАҺЫНЫҢ МАЛЯРИЯҒА ҠАРШЫ СТАНЦИЯҺЫ

1951 йылдың 29 июненән 5 июлгә тиклем республиканың малярияға ҡаршы станцияһы малярия серәкәйҙәренең ҡарышлауыттарын бөтөрөү маҡсатында һыу ятҡылыҡтарына самолеттан ағыу һибәсәк, тип белдерә. Ағыулау эштәре теодифенилалин һәм Париж йәшеле ҡулланыу юлы менән Өфөнән Черниковск ҡалаһына тиклем 5 километрлыҡ зонала һәм халыҡ йәшәгән пункттар: Октябрь революцияһы исемендәге затон, Михайловка, Суровка, Черниковск химия заводының ҡала яны хужалығы, Алексеевка, Сосновка, Тарбеевка, Лавочное, ст. Александровка, Максимовка, Шакша, Базиловка, Пилкыбай, Лудкин переправаһы, Өфә яр йорто, Карповка, Чесноковка биофабриканың ярҙамсы хужалығы, Өфә ҡалаһының Дим районы, Бутарево, Романовка, Миловка, алыҫ булмаған урындарҙа үткәреләсәк.

Умарта аҫраусы кешеләр умарталарын ағыулана торған һыу ятҡылыҡтарынан 7—10 километр ситкә сығарырға тейештәр.

Мал аҫраусылар ағыулау үткәрелгәндән һуң, 3 тәүлек буйына малдарын ағыуланған һыу ятҡылыҡтарына ебәрмәҫкә тейештәр.

Белешмәләр өсөн түбәндәге адреска мөрәжәғәт итергә: Өфә ҡалаһы, Цюрупа урамы, 74-се номерлы йорт. Телефон номеры—2—92—[illegible]

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01983 Әлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 2500[illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№126(8843) 1951 йыл 29 ИЮНЬ йома

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕ — БӨТӘ ХАЛҠ ЭШЕ. К. Щербаков. — Сталинсе төҙөлөштәргә — станоктар (1-се бит).

«ХАЛҠТАР АРАҺЫНДА ТЫНЫСЛЫҠТЫ НЫҒЫТЫУ ӨСӨН» ХАЛҠ-АРА СТАЛИН ПРЕМИЯЛАРЫ КОМИТЕТЕНДӘ. Англияның общественный деятеле, Кентербери соборының настоятеле Хьюлетт Джонсонға Халҡ-ара Сталин премияһын тапшырыу (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. М. Садретдинов. — Райком юғары урожай өсөн көрәштә (2-се бит).

Ф. Зәйнуллин. — Агиткатер рейста (2-се бит).

А. Курмаев. — Колхоздарҙың финанс хужалығын нығытайыҡ (2-се бит).

ПРОПАГАНДИСТАРҒА ҺӘМ МАРКСИСТИК-ЛЕНИНСЕ ТЕОРИЯНЫ ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘРГӘ ЯРҘАМҒА. В. Николаев. — Базис һәм өҫҡорма тураһында иптәш И. В. Сталин (2-се һәм 3-сө биттәр).

ОКТЯБРЬСКИЙҘАН ХАТТАР. Ә. Бикчентаев. — 4. Рус теле (3-сө бит).

Х. Дәүләтшин. — Комбайнерҙарҙың йөкләмәләре (3-сө бит).

И. В. Сталин Әҫәрҙәренең икенсе томын Монголия халҡ республикаһында баҫып сығарыу (4-се бит).

Ғ. Ғәйнуллин. — Беҙ күңелле һәм яҡшы тормошта йәшәйбеҙ (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Культура-ағартыу учреждениеләренә партия етәкселеген көсәйтергә

Тыуған илебеҙ халыҡтары коммунизмдең грандиоз ҡоролоштарын төҙөү, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе пландарын тормошҡа ашырыу буйынса тарихта бында тиңлем тиңдәше булмаған ҙур эштәр алып баралар. Был осорҙа хеҙмәтсән массаларҙың политик аңлылығын һәм культура кимәлен артабан күтәреү айырыуса әһәмиәт ҡаҙана.

«Беҙ бөтә эшселәрҙе һәм бөтә крәҫтиәндәрҙе культуралы һәм белемле итергә теләйбеҙ, — тине иптәш Сталин партияның XVIII съезында, — **һәм беҙ быны ваҡыты менән эшләйәсәкбеҙ».**

Массаларҙың политик һәм культура кимәлдәрен артабан күтәреүҙә, массаларҙы коммунистик рухта тәрбиәләүҙә культура-ағартыу учреждениеләренең роле айырыуса ҙур. Улар ҡалаларҙа, ауылдарҙа миллионлаған массаларға үҙҙәренең белемдәрен күтәреүгә көн һайын ярҙам итәләр.

Партиябыҙ, Совет хөкүмәте культура-ағартыу учреждениеләренең селтәрҙәрен киңәйтеү тураһында атайҙарса хәстәрлек күрә. Быны республикабыҙҙа культура-ағартыу учреждениеләре селтәренең йыл һайын үҫеүе миҫалында ғына ла бик асыҡ күреп була. Республикабыҙҙа культура-ағартыу учреждениеләренең һаны тик һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ эсендә генә 3708-гә етте. Беҙҙең социалистик государствобыҙ культура-ағартыу эшенә бюджет буйынса йыл һайын бик күп средство бүлә. Быйыл культура-ағартыу учреждениеләрен тотоуға бюджет буйынса 28 миллион һум ҡаралған. Республикабыҙ Верховный Советы сессияһы үҙгән йылда культура-ағартыу учреждениеләренең эше тураһындағы мәсьәләне ҡуйып тикшерҙе. Өлкә партия активе йыйылышы идеология мәсьәләләрен тикшергәндә культура-ағартыу учреждениеләре эшенә ҙур иғтибар бирҙе.

Һөҙөмтәлә быйыл республикабыҙҙа культура-ағартыу учреждениеләре үҙ эштәрен байтаҡ яҡшырттылар. Янауыл, Саҡмағош, Борай, Дүртөйлө, Бәрә райондарындағы культура-ағартыу учреждениеләре быйыл байтаҡ уңышлы эшләп килә.

Ләкин, үкенескә ҡаршы, культура-ағартыу эштәре бөтә урындарҙа ла яҡшы итеп юлға һалынмаған әле. Байтаҡ ҡына урындарҙа, мәҫәлән, колхоз клубтары иген складына әйләндерелгән. Учалы районының «Берлек», «Яйыҡ», «Коммунар» һәм «Урал» колхоздарының клубтары әлегә тиклем иген келәте итеп файҙаланыла. Оло Теләк район культура йортон ремонтлауға бюджет тарафынан аҡса бүленгән булыуға ҡарамаҫтан, ремонт һаман башланмаған. Миәкә, Матрай, Зианчура райондарында ла ауыл уҡыу өйҙәренең нормаль эшләмәүҙәре, клубтарҙың утын менән тәьмин ителмәү ваҡиғалары ла булды.

Ҡайһы бер ауыл клубтары, уҡыу өйҙәре үҙҙәренең эш пландарын төҙөгәндә башлыса йәштәрҙе генә күҙҙә тоталар, халыҡтың бөтә ҡатламын культура һәм политик яҡтан хеҙмәтләндереүҙе күҙ уңынан төшөрөп ҡалдыралар. Партия ойошмалары культура-ағартыу учреждениеләренә хеҙмәтсәндәрҙең бөтә ҡатламын да хеҙмәтләндереүгә ярҙам итергә тейештәр.

Культура-ағартыу эштәре-идеологик эштең мөһим участкаһы ул. Шуға күрә партия ойошмалары культура-ағартыу учреждениеләренә етәкселекте үҙҙәренең көндәлек эше итеп һанарға, уларҙың эштәрен контролгә алырға, уларға юнәлеш бирергә тейештәр.

Культура-ағартыу учреждениеләренең эш пландарын төҙөүҙә, беседа үткәреүселәр, докладсылар составын билдәләүҙә партия ойошмалары культура-ағартыу учреждениеләренә яҡындан торон ярҙам итергә бурыслылар. Шул уҡ ваҡытта культура-ағартыу учреждениеләре эшенең идея-политик кимәлен күтәреүгә айырыуса иғтибар бирергә кәрәк.

Культура-ағартыу учреждениеләренең бөтә эштәре хеҙмәтсәндәрҙең коммунистик аңлылығын һәм культураһын күтәреүгә, етештереү пландарын үтәүгә һәм арттырып үтәүгә, илебеҙҙә коммунистик общество төҙөүҙе артабан йәйелдереүгә йүнәлтелгән булырға тейеш.

Социалистик экономиканың капиталистик экономиканан өҫтөнлөгөн күрһәтеү, коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре һәм Совет государствоһының етештереү көстәрен артабан үҫтереүҙә уларҙың роле, промышленность һәм ауыл хужалығы алдынғыларының тәжрибәләрен киң пропагандалау, фән һәм техника ҡаҙаныштары менән массаларҙы таныштырыу, тәбиғәт фәндәрен пропагандалау — культура-ағартыу учреждениеләренең иң мөһим бурысы булып тора. Был государство әһәмиәтенә эйә булған һуғышсан бурыстарҙы үтәүҙә партия ойошмалары культура-ағартыу учреждениеләренә көндәлек ярҙам күрһәтергә тейештәр. Тик шул саҡта ғына культура-ағартыу учреждениеләре үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты уңышлы үтәй, хеҙмәтсәндәрҙең үҫә барған культура талаптарын ҡәнәғәтләндерә алырҙар.

Граждандар һуғышы геройы В. И. Чапаевтең һәм Советтәр Союзы маршалы Ф. И. Толбухиндең иҫтәлегенә

27 июндә, Мәскәүҙә, М. В. Фрунзе исемендәге Хәрби Академия бинаһында граждандар һуғышы геройы В. И. Чапаевтең һәм Советтәр Союзы маршалы Ф. И. Толбухиндең иҫтәлегенә арналған мемориаль таҡталар асылды.

Генерал-полковник А. С. Жданов мемориаль таҡталарҙың береһен ҡаплаған япманы аса. Унда легендар совет полководецының бронза барельефы аҫтына, аҡ мәрмәргә алтын хәрефтәр менән түбәндәге һүҙҙәр яҙылған:

Граждандар һуғышы геройы
Василий Иванович Чапаев
1918—1919 йылдарҙа
М. В. Фрунзе исемендәге хәрби
Академияла уҡыны.

Генерал-полковник А. С. Жданов шунан икенсе япманы аса. Йыйылған кешеләр бронзанан эшләнгән портретты һәм түбәндәге яҙманы күрҙеләр:

Советтәр Союзы маршалы
Федор Иванович Толбухин
М. В. Фрунзе исемендәге
Хәрби Академияны 1934 йылда
тамамланы.

Мемориаль таҡталарҙы асҡандан һуң М. В. Фрунзе исемендәге Академия тыңлаусыларының, профессорҙар-преподавателдәр составының тантаналы маршы үткәрелде.

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕ — БӨТӘ ХАЛҠ ЭШЕ

Республикабыҙҙың күп кенә заводтары, фабрикалары коммунизм төҙөлөштәре заказдарын үтәйҙәр. Урман эшселәре, йылғасылар Куйбышев, Сталинград ГЭС-тарын төҙөүгә күп һанда ағас материалдары оҙаталар. Коммунизм төҙөлөштәренең заказдарын срогынан алда, яҡшы сифатлы итеп үтәү, — коллективтарҙың маҡтаулы бурысы булып тора. Газетабыҙҙың бөгөнгө номерендә бөйөк төҙөлөштәрҙең заказдарын үтәү барышы тураһында материалдар урынлаштырабыҙ.

Сталинсе төҙөлөштәргә—станоктар

Коммунизм төҙөлөштәрен тормошҡа ашырыуҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһы Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводы коллективе актив ҡатнаша. Март һәм апрель айҙарында беҙҙең завод коммунизмдең был төҙөлөштәренән төрлө маркалағы вертикаль бораулап тишеү станоктары етештереү буйынса заказдар ҡабул итте. Уларҙы үтәү — заводта ҙур ваҡиғаға әйләнде. Коллектив үҙенең хеҙмәт етештереүсәнлеген бығаса күрелмәгән дәрәжәгә күтәрҙе.

Заказдарҙы үтәүҙә заводтың ҡойоу һәм тимерлек цехтары айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Ҡойоу цехы коллективы ауыр хеҙмәт талап иткән эш процестарын механизациялаштырыу буйынса ҙур ғына эштәр башҡарҙы. Хәҙер күп деталдәр формаға пневматик станок ярҙамында һалына. Тимерлек цехында ла деталдәрҙе штамповкалауҙа бик күп металға экономия яһалды.

Почетлы заказдарҙы срогынан алда үтәү һәм отлично сифатлы продукция етештереү хәрәкәте көндән-көн киңерәк ҡолас ала. Цех начальниктәре, мастерҙар һәм технологтар коллективта хеҙмәтте яңыса ойоштороу, деталдәрҙең производство процесында булыу ваҡытын ҡыҫҡартыу өсөн үҙҙәренең ижади көстәрен йәлләмәйҙәр. Мастер иптәш Шәрипов тәҡдиме буйынса деталдәрҙе эшкәртеүҙең операцияларын айырым эшселәргә беркетеү башланды. Цехтарҙа хеҙмәтте ойоштороуҙың был формаһы хеҙмәт етештереүсәнлеген һиҙелерлек күтәрҙе. Хәҙер заводтың 65 станогы металды юғары тиҙлектә ҡырҡыуға күсерелде. Тиҙ ҡырҡыусылар һаны 96 кешегә етте. Улар араһында фрезеровщиктар Томилин, Сәйфуллина, токарҙар Клименко, Горсков һәм башҡа иптәштәр юғары тиҙлектә эшләйҙәр, отлично сифатлы продукция етештерәләр. Завод 1951 йылдың 4 айлыҡ производство планын уңышлы үтәне.

Коллективтең фиҙакәр хеҙмәте коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренән килгән заказдарҙы срогынан алда эшләргә мөмкинлек бирҙе. Каховка гидроузелына, «Укрводстрой», «Куйбышевгидрострой»ға һәм Төп Төркмәнстан каналдарына юғары сифатлы станоктар оҙатылды. Завод «Главгидроволгодонстрой» һәм «Куйбышевгидрострой» төҙөлөштәренән яңы заказдар алды. Хәҙер коллектив был заказдарҙы срогынан алда үтәү өсөн көрәшә.

К. Щербаков,
Стәрлетамаҡ Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводының производство бүлеге начальнигы.

Коммунизм төҙөлөштәренә

Күптән түгел мин «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы аша үҙемдең производство буйынса элекке дуҫым Екатерина Кацелдең коммунизм төҙөлөштәренең береһе — Волга—Дон каналы төҙөлөшөндә эшләгәнен белдем. Уның беҙҙең осорҙоң шундай бөйөк төҙөлөшөн тиҙлек менән тамамлау өсөн арымай-талмай эшләүенә мин бик шатмын.

Мин элек, заводтың диспетчеры булып эшләй инем. Ә хәҙер инде мине дуҫым Катя эшләгән лампаларҙы төрәү цехы начальнигы итеп ҡуйҙылар. Үҙемдең эшемдә бик ҙур ҡәнәғәтләнеү менән эшләйем. Беҙҙең цех коллективы государство планын айҙан-айға арттырып үтәй һәм коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә ҙур ярҙам күрһәтә. Май айында беҙҙең цех производство планын 116,9 процентҡа үтәне. Шулай уҡ ҙур ғына экономик күрһәткестәргә өлгәште. Цех коллективы үҙған айҙа ғына 45 мең һум экономия бирҙе. Июнь айының бары тик тәүге 10 көнө эсендә генә материалдарға яһалған экономия 24 мең һум тәшкил итте. Беҙҙең был производство уңыштарыбыҙ коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә ҙур вклад булып тора.

Завод буйынса май айының производство планы 107 процентҡа үтәлде һәм башҡа төр экономик күрһәткестәр ҙә байтаҡ яҡшырҙы.

Беҙҙең завод бөйөк төҙөлөштәрҙән бер нисә тапҡыр почетлы заказдар алып, уларҙы срогынан алда үтәне. Май айында беҙ Куйбышев һәм Сталинград ГЭС-тарына 450 мең дананан артығыраҡ электр лампалары эшләп оҙаттыҡ. Заводтың эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре бөйөк төҙөлештәрҙең заказдарын ҙур производство күтәренкелеге менән үтәйҙәр. Тамара Калинина, Василий Аҙушев, Зоя Каткова һәм башҡа иптәштәр производство пландарын систематик арттырып үтәйҙәр һәм заводтың алдынғы стахановсылары һәм цех етәкселәре булып һаналалар.

Беҙ, Волга—Дон каналы төҙөлөшө коллективының уңышлы эшләүенә яуап итеп, үҙ эшебеҙҙә хеҙмәт етештереүсәнлеген тағы ла күтәрергә, продукцияның сифатын яҡшыртырға, үҙенә төшөү хаҡын кәметергә, коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренән алынған заказдарҙы срогынан алда үтәргә һүҙ бирәбеҙ.

А. Земцова,
Черниковск ҡалаһы электр лампалары заводының төрәү цехы начальнигы.

Бөйөк маҡсатҡа фиҙакәр хеҙмәт

Большевиктар партияһы етәкселегендә коммунизм төҙөү өсөн беҙҙең илебеҙҙә ныҡлы нигеҙ һалынды. Кешелек донъяһының бөйөк даһие Ленин, коммунизм—Ул Совет власы һәм бөтә илде электрләштереү, тип күрһәткәйне.

Совет халҡы бөйөк даһи Лениндең был күрһәтмәһен тулыһынса тормошҡа ашырыу өсөн Волгала, Донда, Днепрҙа һәм Төркмәнстанда коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрен йәйелдерҙе. Был бөйөк төҙөлөштәргә хәҙер бөтә совет кешеләре үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәрен арнайҙар.

Беҙҙең бригада члендәре лә коммунизм төҙөлөштәрен төҙөүҙә ҡатнаша. Сөнки ул заказдар үтәй. Беҙ үҙебеҙҙең нормаларыбыҙҙы ике-өс тапҡырға арттырып үтәү менән бергә, юғары сифатлы ғына продукция эшләп сығарырға йөкләмә алдыҡ. Йөкләмәләр намыҫ менән үтәлә. Бригадала үҙенең нормаһын 200 проценттән дә кәмгә үтәмәгән бер генә кеше лә юҡ. 11 кеше — бөтәбеҙ ҙә заводтың Почет таҡтаһында. Шәрипов, Хөсәинов һәм Ручко иптәштәр нормаларын 300 процентҡа еткереп үтәйҙәр.

Беҙҙең бригадала продукцияның бракҡа сығыу факты булғаны юҡ. Беҙ был уңыштарға квалификациябыҙҙы өҙлөкһөҙ күтәреү һәм хеҙмәтте механизациялаштырыу һөҙөмтәһендә өлгәштек. Деталде эшкәртеүҙә элекке ябай киҫкес һәм сүкеш урынына автоматик киҫкес ҡулланабыҙ.

Беҙ өлгәшелгәндәр менән сикләнмәйбеҙ. Илебеҙҙә коммунизм төҙөүҙе тиҙләтеү өсөн производствоны өҙлөкһөҙ үҫтереү төп шарт икәнен аңлап, беҙ хеҙмәт етештереүсәнлеген тағы ла юғарыраҡ күтәреү өсөн көрәшәбеҙ.

Р. Таһиров,
Стәрлетамаҡ төҙөлөш машиналары заводының ҡойоу цехы мастеры.

Почетлы заказ срогынан алда үтәлер

Беҙҙең Өфө Октябрь революцияһы исемендәге суднолар ремонтлау заводы коллективы коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренән почетлы заказдар алды. Был шатлыҡлы хәбәр йәшен тиҙлеге менән бөтә эшселәргә лә таралып өлгөрҙө. Коллектив Куйбышев ГЭС-ына 2 баржа төҙөп ебәрергә тейеш.

Беҙ был почетлы заказды срогынан алда үтәргә йөкләмә алдыҡ. Социалистик ярышты быға тиклем булмаған көс менән йәйелдерҙек. Бөтә эшселәр ҙә шулай уҡ индивидуаль ярышҡа сыҡтылар. Заказды үтәүҙә котельщиктар бригадалары члендәренән Ганюшкин, Гуськов, Герасимов, Пашин, Ғәзизов һәм башҡа бик күп иптәштәр айырыуса яҡшы эш өлгөләре күрһәтәләр. Комсомолец иптәш Ғәзизов үҙенең көндәлек нормаһын 1,5 тапҡырҙан да кәмгә үтәмәй. Ә электросварщик Тимохиндең задание үтәлеше 160 процент тәшкил итә.

Коллективтең фиҙакәр хеҙмәтен коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре заказдарын срогынан алда үтәүгә йүнәлдереүҙә завод партия ойошмаһының хеҙмәте ҙур. Ул эшселәр араһында агит-массовый эште тағы ла киңерәк йәйелдерҙе. Һөҙөмтәлә тиҙҙән 2 баржа срогынан алда төҙөлөп бөтәсәк. Был хеҙмәт суднолар ремонтлау заводы коллективының Куйбышев ГЭС-ына ҙур ярҙамы буласаҡ.

М. Степанов,
Өфө суднолар ремонтлау заводының партия ойошмаһы секретары.

„Халҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн" халҡ-ара Сталин премиялары комитетында

Англияның общественный деятеле, Кентербери соборының настоятеле Хьюлетт Джонсонға халҡ-ара Сталин премияһын тапшырыу

27 июндә Кремлдең Свердлов залында Англияның күренекле общественный деятеле, тыныслыҡ һәм халҡтар араһында дуҫлыҡ өсөн актив көрәшсе, Кентербери соборының настоятеле — Хьюлетт Джонсонға «Халҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халҡ-ара Сталин премияһы тапшырылды.

Залда совет общественный ойошмаларының күп һанлы вәкилдәре, илдең атаҡлы ғалимдәре, яҙыусылар, искусство деятелдәре, Мәскәү предприятиеләренең стахановсылары, рус православный сиркәүенең вәкилдәре ҡатнашты.

Халҡ-ара Сталин премияһы лауреаты Хьюлетт Джонсондың залда күренеүен унда ҡатнашыусылар йылы ҡаршыланылар.

Халҡ-ара Сталин премиялары буйынса комитеттең ошо йылдың 6 апрелендәге ҡарары иғлан ителә, унда тыныслыҡты һаҡлау һәм нығытыу өсөн көрәштә күренекле хеҙмәттәре өсөн Хьюлетт Джонсонға «Халҡтар араһында тыныслыҡты нығытыу өсөн» халҡ-ара Сталин премияһы бирелә, тип әйтелгән.

Комитет председателе академик Д. В. Скобельцин тантаналы рәүештә Хьюлетт Джонсонға халҡ-ара Сталин премияһы лауреаты дипломын һәм алтын медаль тапшыра, медалдең уң яғында—тыныслыҡтың бөйөк байраҡсыһы И. В. Сталиндең барельефы.

Хьюлетт Джонсонды ҙур наградa менән ҡотлап, академик Скобельцин былай тине:

«Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы члены сифатында үҙегеҙҙең һөҙөмтәле эшегеҙ менән, Англияла һәм башҡа илдәрҙә тыныслыҡ яҡлаусылар хәрәкәтен киңәйтеүгә һәм нығытыуға йүнәлтелгән күп йыллыҡ ныҡышмалы хеҙмәтегеҙ менән һеҙ кешелек бәхете өсөн көрәшселәрҙең алдынғы сафында булыуҙың почетлы хоҡуҡын ҡаҙандығыҙ.

Беҙ һеҙҙең «килеп тыуған халҡ-ара обстановка йоғонтоһо аҫтында бөтә Англияла тыныслыҡ факелдары тағы ла яҡтыраҡ яныр, уны бер кем дә, бер ҡасан да һүндерә алмаҫ» тигән һүҙҙәрегеҙҙе иҫтә тотабыҙ. Хәҙер беҙ ер шарының бөтә мөйөштәрендә лә тыныслыҡ факелдарының яҡты яныуы тураһында һөйләүсе яңынан-яңы факттарҙы шатлыҡ менән ишетәбеҙ. Шик юҡ, уларҙың яҡтылығы алдында империалистик реакцияның ҡара көстәре тарафынан әҙерләнгән яңы һуғыш яфаларының ҡот осҡос ҡараңғылығы таралыр.

Бөтә донъяла тыныслыҡ эшен бөйөк яҡлаусы — Иосиф Виссарионович Сталин исеме менән аталған халҡ-ара премияны һеҙгә тапшырыуҙың күренекле аҡтыл халҡтарҙың бөтә көстәрен ныҡлы һәм оҙаҡҡа һуҙылған тыныслыҡ өсөн көрәшкә артабан туплауға хеҙмәт итһен».

Ҡотлау телмәрҙәрен һуң тыныслыҡты яҡлауҙың Совет комитеты председателе Н. С. Тихонов, профессор И. Е. Глущенко, һәм рус православный сиркәүе исеменән Крутицкий һәм Коломенский митрополите Николай сығыш яһаны.

Яуап телмәре менән халҡ-ара Сталин премияһы лауреаты Хьюлетт Джонсон сығыш яһаны, залда булыусылар уны йылы ҡаршыланылар.

(ТАСС).

УРМАН ПРОМЫШЛЕННОСЕНДӘ ХЕҘМӘТ ХАҠЫ ТҮЛӘҮҘЕҢ ЯҢЫ СИСТЕМАҺЫ

Беҙҙең Тыуған илебеҙҙә ағас материалдарына талап ғәйәт ҙур. Халҡ хужалығында ағас материалдарын ҡулланмаған бер генә тармаҡ та юҡ. Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә, ҡала промышленносына һәм торлаҡ төҙөлөшөнә, ауылдарҙы төҙөкләндереүгә — бөтәһенә лә ағас материалдары талап ителә.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡта ағас әҙерләүсе предприятиеләрҙең йөҙө танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Улар ауыр хеҙмәт талап итеүсе эш процестарын механизациялаштырырға һәм эшселәрҙең хеҙмәтен бик күп тапҡырға еңеләйтергә мөмкинлек биреүсе юғары совет техникаһы менән байыҡтырылдылар.

1950 йылда ғына, 1949 йылға ҡарағанда, «Башлес» тресының леспромхоздарында ағас әҙерләү буйынса механизациялаштырылған эш күләме 2 тапҡырҙан да артығыраҡ, ағас ташыу 3 тапҡырға артты. Быйыл механизация үҫеше дауам итә. Урман промышленносы работниктәре өсөн яңы посёлкалар төҙөлә. Буйҙаҡ эшселәр өсөн дөйөм торлаҡтар, ә семьялы эшселәр өсөн индивидуаль йорттар төҙөлөп, арты гектарға тиклем йәшелсә баҡсалары бирелә. Шулай уҡ улар бесән сабыу участкалары менән тәьмин ителәләр. Посёлкалар электрлаштырелалар, радиолаштырылалар һәм уларҙа клубтар, больницалар төҙөлә.

Урман промышленносының даими эшселәре ит һәм һөт поставкалары буйынса льготалар менән файҙаланалар. Күп хеҙмәт итеүсе эшселәргә өҫтәмә рәүештә аҡса түләү тәртибе билдәләнә. Күптән түгел СССР Верховный Советы Президиумы урман промышленносы работниктәрен оҙаҡ йылдар буйы арымай-талмай эшләгәндәре өсөн ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында Указ сығарҙы. 1951 йылдың 1 июненән алып ағас әҙерләү предприятиеләрендә хеҙмәт хаҡын түләүҙең яңы системаһын индереү тураһында СССР Министрҙәр Советының ҡарары коммунистар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең урман промышленносы работниктәре тураһында яңы хәстәрлеге булып тора.

Хеҙмәт хаҡы түләүҙең яңы системаһы ағас әҙерләүсе эшселәрҙең, бигерәк тә механизатор кадрҙарының, тормош шарттарын яҡшыртыуға, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙе тәьмин итеүгә, эш нормаларын үтәү һәм арттырып үтәүгә йүнәлдерелгән. Сезон премияларын түләүҙең хәҙергә ҡәҙәр тиклем йәшәп килгән системаһында ҙур ғына етешһеҙлектәр бар ине. Ул, юғары квалификациялы эшселәрҙең хеҙмәте менән түбән квалификациялы эшселәрҙең хеҙмәте араһында эш хаҡын тигеҙ ҡуйып, механизаторҙар кадрҙарын стимуллаштыра алманы.

Хеҙмәт хаҡын түләүҙең яңы системаһы бындай бутаулыҡтарға һәм етешһеҙлектәргә сик ҡуйҙы. Шулай уҡ ул урмандағы төп эштәрҙә уртаса 38 — 40 процентҡа күтәренке тариф ставкалар билдәләй, квалификациялы эшселәрҙең һәм түбән квалификациялы эшселәрҙең хеҙмәттәре өсөн түләүҙең тигеҙлегенә сик ҡуя. Тракторсыларҙың көндәлек ставкалары 45 процентҡа, трелевкалағы лебедчиктарҙың — 63 процентҡа, ағастарҙы ботаҡтарынан таҙартыусыларҙың көндәлек ставкалары 74 процентҡа күтәрелде.

Яңы система хеҙмәт өсөн прогрессив түләүҙе күҙ алдында тота. Ағас әҙерләү, ташыу һәм сығарыу, сортировка итеү, һаллау өсөн ағас бирҙеү һәм башҡа эштәр менән шөғөлләнеүсе эшселәр ярты ай эсендә нормаһын 100 процентҡа үтәгән өсөн ярты айлыҡ нормаға иҫәпләнеүсе төп сдельный баһаның 20 проценте күләмендә өҫтәмә хаҡ алалар. Ярты айлыҡ норманан тыш арттырып үтәлгән бөтә продукция өсөн хеҙмәт хаҡы 1,5 тапҡырға арттырылған баһа буйынса түләнә. Мәҫәлән, әгәр электр бысҡыһы менән эшләүсе эшсе көндәлек нормаһын 99 процентҡа үтәһә, был ваҡытта ул һәр бер кубометр өсөн 1 һум 40 тин эш хаҡы ала. Әгәр ҙә ул норманы 100 процентҡа үтәһә, уның эш хаҡы һәр бер кубометр өсөн 1 һум 69 тин тәшкил итә. Норманы арттырып үтәгән ваҡытта — 100 процентҡа үтәгән нормаһы өсөн һәр бер кубометрға 1 һум 69 тин, ә норманан һәр бер арттырып үтәгән кубометр өсөн ул 2 һум 12-шәр тин эш хаҡы ала.

Механизаторҙар кадрҙары эш нормаһын арттырып үтәгәндән һәм өҙлөкһөҙ эшләгәндән башҡа механизмдарҙы яҡшы ҡараған өсөн өҫтәмә рәүештә түбәндәге күләмдә премиялар алалар: тракторсылар һәм лебедчиктар сдельный баһа буйынса төп айлыҡ эш хаҡының 15 процентын; «ПЭС» электромеханиктәре, шоферҙар, мотовоз мотористәре, паровоз машинистары — 10 процентын; «ПЭС — 50» һәм «ПЭС — 60» мотористәре, «ПЭС — 40» машинистәре (кочегарҙар), бульдозерҙар менән эшләүселәр, тракторист ярҙамсылары 5 процентын. Премия директорҙың рөхсәте менән алдағы айҙың 10 числоһында бирелергә тейеш.

Эш хаҡын түләүҙең яңы системаһы, эш нормаларын эрелтеү урман промышленносы предприятиеләрендә юғары етештереүсәнле эшләргә мөмкинлектәр бирәләр, көндәлек эш нормаһын һәм эшсенең хеҙмәтен билдәләүҙә ябайлылыҡ, бөтә урман участкаларында һәм ағымлы линияларҙа, бөтә бригадаларҙа күрһәткестәр таҡтаһы булдырырға мөмкинлек тыуҙыралар.

Ағас әҙерләүсе предприятиеләрҙең етәкселәре һәм специалистәре, партия һәм профсоюз ойошмалары етәкселәре даими һәм сезонлы эшселәргә хеҙмәт хаҡын түләүҙең яңы системаһының өҫтөнлөктәрен аңлатырға, ағас әҙерләүҙең быйылғы яҙғы-йәйге сезон планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерергә бурыслылар.

Н. Соколовский,
«Башлес» тресы управляющийының урынбаҫары.

Республика йәш нефтселәренең слеты

Ошо йылдың 28 июнендә Өфө ҡалаһында республикабыҙ йәш нефтселәренең дүртенсе слеты булып үтте. Слет ВЛКСМ Өлкә Комитеты, «Башнефть», «Башнефтезаводтар» берекмәләре тарафынан үткәрелде.

Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләренең үтәлеше тураһында «Башнефть» берекмәһенең начальнигы иптәш Кувыкин һәм «Башнефтезаводтар» берекмәһе начальнигы иптәш Осадченко доклад менән сығыш яһанылар.

Фекер алышыуҙарҙа Октябрьский нефтселәренән—Быков, Аллаяров, Москвой, Костылев; Ишембай нефтселәренән — Кувшинов, Әхмәтшина, Прядко, Шурупов; Черниковск ҡалаһы нефтселәренән — Тюрин, Иванова, Гуляев; «Башнефть» берекмәһе баш инженеры Байраҡ һәм башҡа бик күп иптәштәр сығып һөйләнеләр. Улар үҙҙәренең производство уңыштары, Башҡортостан нефтселәре иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү тураһында һөйләнеләр һәм булған етешһеҙлектәрҙе асҡылар.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Райком юғары урожай өсөн көрәштә

Миәкә районының колхозсылары, МТС һәм совхоз работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре 1951 йылда район ауыл хужалығын артабан күтәреү, ауыл хужалығы культураларының уңышын арттырыу, общественный малсылыҡты үстереү һәм уның продуктивлеген күтәреү өсөн социалистик ярышҡа сыҡтылар. Районның колхоздары арыш, бойҙай, һоло культуралары буйынса һәр гектарҙан кәмендә 100-әр бот урожай алырға йөкләмә алдылар.

ВКП(б)-ның район комитеты үҙенең бөтә партия-политик һәм агитацион-массовый эшен ошо йөкләмәне үтәү өсөн көрәшкә юнәлтте. Был ҙур эште башҡарыуҙа партияның тәүге ойошмалары райкомдың терәге булып торалар. Тәүге ойошмалар колхозсылар һәм механизаторҙар араһында агитацион-массовый эшкә киң ҡолас бирҙеләр. Улар коммунистарҙы юғары урожай алыуҙы хәл итә торған, яуаплы эш участкаларына беркеттеләр. Районда 250 коммунист туранан-тура колхоз производствоһында эшләй, 103 коммунист колхоздарҙа, бағыусылыҡ һәм трактор бригадаларына етәкселек итә.

Райком һәм партияның тәүге ойошмалары механизаторҙар араһында массовый-политик эште ойоштороуға ҙур иғтибар бирҙеләр. Елдәр МТС-ының иптәш Ғ. Хәбиров етәкселек иткән трактор бригадаһында агитацион-массовый эш айырыуса яҡшы ойошторолдо. Унда көн һайын беседа, газета-журналдар һәм художестволы китаптар уҡыу үткәрелә, боевой листок сығарыла. Агитатор Сәлимгәрәев социалистик ярыш йөкләмәләренең үтәлешен тикшерә, күрһәткестәрҙе сығарып бара, алдынғы тракторсыларҙың эш алымдарын пропагандалай. Бригадала тракторсыларҙың вагончигы матур итеп йыһазландырылған. Вагончикта газета-журналдар һәм библиотека бар.

Елдәр МТС-ының партия ойошмаһы (секретары иптәш Шарипов) Иван Бунеевтең эш методын трактор бригадаларына таратыуҙы ойоштора, МТС-тың эске материаль һәм техник резервтарын иҫәпкә алыны, уларҙы тулыһынса файҙаланыу өсөн көрәш асты. Коммунист иптәш Сахиуллин етәкселек иткән трактор бригадаһы эске резервтарҙы файҙаланыу һөҙөмтәһендә яҙғы эштәрҙе юғары сифатлы итеп тамамланы.

ВКП(б) райкомы партия-ойоштороу һәм партия-политик эште яҡшыртыу, коммунистарҙың авангардлыҡ ролен тулыһынса күтәреү өсөн пропаганда һәм агитация эшен яҡшыртыуға айырыуса иғтибар бирә. Бер йыл эсендә райком бюроһында партия ойошмалары секретарҙарының информациялары тыңланды. Хәҙер семинарҙар үткәрәбеҙ, райком работниктәрен партия ойошмаларының эшен тикшереү һәм ярҙам күрһәтеү өсөн урындарға ебәреп торабыҙ.

Райком, урындарҙа алып барылған агитацион-массовый эшкә етәкселек итеү менән бергә, район партия һәм совет активының көсө менән колхозсылар һәм МТС работниктәре араһында политик докладтар үткәреүҙе ойоштора. Райкомдың бүлек мөдирҙәренән Әхмәтов, Дубов иптәштәр, партия кабинеты мөдире Ғайсин, райсоветтың культура-ағартыу бүлеге мөдире Бәлиев иптәштәр яҡшы әҙерләнгән докладтар менән урындарға сығалар. Тик сәсеү осоронда ғына район буйынса 96 политик доклад үткәрелде.

Хәҙер колхоздарҙа сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү һәм пар һөрөү эштәре ҡыҙыу темп менән бара. 20 мең гектарҙан артыҡ сәсеүлек ҡый үләндәренән таҙартылды ла инде. Пар һөрөү планын үтәгән колхоздарҙың һаны көндән-көн арта.

МТС-тарҙа һәм колхоздарҙа урожай йыйнауға әҙерлек эше киң йәйелдерелде. Урожай йыйыу осорон үткәреү өсөн колхоздарҙа һәм бригадаларҙа хәҙерҙән үк эш пландары төҙөлә. Партия ойошмалары был әҙерлек эшендә хәл иткес роль уйнайҙар.

М. Садретдинов,
ВКП(б)-ның Миәкә райкомы секретары.

Агиткатер рейстә

Өфө—Ҡариҙел—Өфө... Ағиҙел йылға пароходствоһы политбүлеге агиткатеренең есенсе рейсе шулай ине. Был рейс 15 тәүлек дауам итте. Ошо ваҡыт эсендә катерҙың агитбригадаһы 12 пристанде, 40-тан артыҡ судно һәм уларҙағы бакенщиктар посттарын хеҙмәтләндерҙе. Агитбригадалар массовый-политик һәм культура-ағартыу эштәре менән бөтә йылғасыларҙы ла тиерлек солғаны. Катерҙың агитбригадаһы ... турарында 14 доклад уҡыны. Суднолар һәм пристандар коллективтары менән «Совет халҡының бөйөк еңеүе», «Коммунизмдың бөйөк төҙөлештәре» һәм башҡа шундай темаларға уларҙан беседа үткәрелде. Ҡариҙел йылғасылары граммофон пластинкалары аша башҡорт, рус, татар телендә 50-нән артыҡ концерт тыңланылар. Йылғасылар өсөн 19 киносеанс бирелде.

Агитбригада стена газеталары һәм боевой листоктар сығарҙы. Стена матбуғаты биттәрендә производство алдынғыларының эш тәжрибәләре, тотош коллективтарҙың һәм айырым кешеләрҙең социалистик йөкләмәләрен үтәүҙәре тураһындағы хәбәрҙәр урынлаштырылды; пристандарҙың һәм судноларҙың эшендәге етешһеҙлектәр тәнҡитләнде.

ВКП(б) тарихын өйрәнеүселәр өсөн агитбригада консультациялар ойоштороҙо. Мәҫәлән, Бирҙә пристанендә ВКП(б) тарихын өйрәнеү түңәрәгенә беренсе һәм икенсе йыл уҡыусылар өсөн диалектик һәм тарихи материализм буйынса консультация уҙғарылды.

Комсомолецтар һәм союздан тыш йәштәр өсөн «Культура һәм ихтирамлыҡ», «Дуҫлыҡ һәм иптәшлек» һәм башҡа темаларға докладтар уҡылды. Комсомол ойошмалары булған судноларҙа «Йылға флоты предприятиеләре, судноларҙа һәм төҙәлештәрҙә комсомол ойошмаларының эше тураһында» ВЛКСМ Үҙәк Комитеты ҡарарының үтәлеше тикшерелде. Тикшереү һөҙөмтәләре асыҡ комсомол йыйылыштарында ҡаралды. Был йыйылыштарҙа, конкрет факттар һәм миҫалдарға таянып, комсомол ойошмаларының эшендәге етешһеҙлектәр күрһәтелде һәм тәнҡитләнде.

Катерҙың агитбригадаһы пристандарҙағы һәм судноларҙағы партия, комсомол, профсоюз ойошмаларының эше менән яҡшылап танышты һәм уларға партия-ойоштороу һәм партия-политик эште яҡшыртыуҙа конкрет ярҙам күрһәтте.

Рейстең барышында 50-нән артыҡ партия, профсоюз һәм комсомол йыйылыштары, кәңәшмәләр үткәрелде. Был йыйылыштарҙа ... Мәҫәлән, Ағиҙел пароходствоһы коллективы профсоюз йыйылыштарында ... тураһында мәсьәлә ҡаралды. ... 35 кеше сығып һөйләне. Улар юғарылатылған йөкләмәләр алдылар.

Агитбригада тарафынан үткәрелгән массовый-политик һәм культура-ағартыу эштәре йөк таныу буйынса государство планын үтәү өсөн көрәштә ыңғай роль уйнаны. Ағиҙел пароходствоһы ... айлыҡ планын тулыһынса үтәне. Ә ҡайһы бер суднолар үҙ пландарын 120—130 процентҡа, шулар иҫәбенән: «Игарка» пароходы — 125 процентҡа, «Комсомолка» пароходы — 120 процентҡа, «Ляпидевский» пароходы 130 процентҡа үтәнеләр.

Ф. Зәйнуллин,
«Д—3» агиткатеренең агитбригадаһы етәксеһе.

Партия-комсомол группаһы—социалистик ярышты ойоштороусы

Миәкә МТС-ының 14-се номерлы трактор бригадаһында яҙғы сәсеүгә тәшеүҙән бик күп алда партия-комсомол группаһы ойошторолғайны. Был партия-комсомол группаһы үҙенең тәүге көндәренән үк, яҙғы сәсеүҙе һәм пар һөрөүҙе иң ҡыҫҡа агротехник срокта, юғары сифатлы итеп башҡарыу маҡсатында хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, сәғәт графигы буйынса эшләү методын индереү, бригадала эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу, яғыулыҡҡа экономия яһау өсөн социалистик ярыш ойоштороҙо.

Ярыш беренсе көндән үк киң ҡолас алды. Коммунист, тракторист иптәш Х. Хәсәнов, эш өҫтөндә һәр бер минутты тулыһынса файҙаланыу һөҙөмтәһендә, тупға һөрөлгән ерҙе тырматыуҙы графикта билдәләнгән ваҡыттан алда тамамланы, ә бойҙай сәсеүҙә һәм пар ерҙәрҙе һөрөүҙә ул эш темпын тағы ла арттырҙы. Көндәлек эш заданиеһен 200—250 процентҡа үтәй башланы һәм бригаданың ҡыҙыл вымпелын алды.

Уның менән ярышыусы комсомолец иптәш С. Ильясов та юғары эш өлгөләре күрһәтә. Тәүҙә ул смена заданиеһен 100 процентҡа артыҡҡа үтәй алмай ине, ә хәҙер көн һайын заданиене, юғары сифатлы итеп, 250 процентҡа еткереп үтәй.

Партия-комсомол группаһы социалистик ярыш йөкләмәләренең үтәлешенә йомғаҡ яһап, уны аҙна һайын производство кәңәшмәһенә йәки партия-комсомол группаһы йыйылышына ҡуйып тикшерә. Производство кәңәшмәләрендә һәм партия-комсомол группаһы йыйылыштарында хеҙмәт дисциплинаһын, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм, шул нигеҙҙә, МТС менән колхоз араһында төҙөлгән договорҙың ваҡытында үтәлеүен тәьмин итеү тураһындағы мәсьәләләр ҙә ҡарала; бригаданың эшендә булған етешһеҙлектәр тәнҡитләнә, уларҙы бөтөрөү саралары билдәләнә.

Партия-комсомол группаһы бригадала агитацион-массовый һәм культура-ағартыу эштәре алып барыуға айырыуса ҙур әһәмиәт бирә. Группорг иптәш Дәүләтов бригадаға газета-журналдарҙың ваҡытында килтерелеп тороуына өлгәште. Күсмә вагончик яҡшы итеп йыһазландырылды. Унда библиотека эшләй, радиоприемник бар. Механизаторҙар араһында художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәге ойошторолдо, ул аҙнаға бер тапҡыр концерт бирел тора. Агитатор иптәш Хәсәнов көн һайын беседалар үткәрә, политик информациялар яһай. Бригадала почет һәм күрһәткес таҡталары бар.

Х. Сафин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Колхоздарҙың финанс хужалығын нығытайыҡ

1950 йылда республикабыҙҙың күп кенә колхоздары керем-сығым сметаларын тулыһынса үтәп һәм арттырып үтәп, үҙҙәренең финанс хужалыҡтарын нығытыуҙа ҙур ғына уңыштарға өлгәштеләр. Колхоздарҙағы ярҙамсы предприятиеләр һәм башҡа тармаҡтар артелдәрҙең финанс хужалыҡтарын нығытыуҙа, сметаның доходтар өлөшөн үтәүгә ҙур роль уйнаны. Краснокам районының Свердлов исемендәге колхозы үткән йылда 190 мең 355 һум суммала доход алып, йыллыҡ керем сметаһын байтаҡ арттырып үтәне. Был сумманың 75 проценте, игенселек һәм малсылыҡты индермәйенсә, тик ярҙамсы һәм хужалыҡтың башҡа тармаҡтарынан алынды. Кушнаренко районы Ленин исемендәге, Мишкә районы «Алға», Белоҡатай районы «Искра» һәм республикабыҙҙың байтаҡ башҡа районларының күп кенә колхоздары хужалыҡты күп тармаҡлы итеп ҡороу, эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланыуҙары арҡаһында былтыр керем сметаһын байтаҡ арттырып үтәүгә өлгәштеләр. Уларҙың тик ярҙамсы хужалыҡтарҙан килгән доходтары ғына йөҙәрсә мең һум тәшкил итә.

Ләкин был алдынғы колхоздар менән бер рәттән, үҙҙәренең керем-сығым сметаларын үтәй алмаған колхоздар ҙа республикабыҙҙа юҡ түгел. Покровка районы «Победа», Аҫҡын районы Буденный исемендәге колхоздар ана шундайҙарҙан иҫәпләнәләр. Сөнки улар 1950 йылдың керем-сығым сметаларын иң бары 22—25 процентҡа ғына үтәнеләр. Матрай районы Сабиров исемендәге, Стәрлебаш районы Карл Маркс исемендәге, Благовар районы «Новая жизнь» колхоздары ла керем-сығым сметаларын насар үтәйҙәр. Быны был кәмселектәр ярҙамсы предприятиеләрҙән һәм аҡса инә торған башҡа ярҙамсы тармаҡтарҙан алына торған доход пландарының ҡәнәғәтләнерлек үтәлмәүҙәренән килеп сығалар.

Күп кенә колхоздарҙа керем-сығым сметаларының насар үтәлеүе — правление етәкселәренең һәм ҡайһы бер район ауыл хужалығы бүлеге работниктәренең доход пландарын үтәү өсөн систематик көрәш алып бармауҙарын бик асыҡ күрһәтәләр.

1951 йылда бөтә колхоздарҙа ла керем-сығым сметаларының һәр бер статьяһын үтәүҙе тәьмин итеү өсөн даими һәм ныҡышмалы эшләү талап ителә. Яҡын арала колхоздарҙың ярҙамсы хужалыҡтарын арттырғанда һәм уны күп тармаҡлы хужалыҡҡа әйләндергәндә генә быға өлгәшеп була. Ә быны өсөн хәҙер киң мөмкинлектәр асылды. Колхоздарҙы эрелләтеү арҡаһында күп доход бирә торған көслө ярҙамсы хужалыҡтар булдырыуға етерлек тиклем материаль-техник средстволар барлыҡҡа килде.

Бөтә колхоздарҙа ла материаль һәм аҡса средстволарына иҫәп эштәрен тәртипкә килтереү, шулай уҡ артыҡ средстволарҙы государство банкыһының ағымдағы счеттарында ваҡытлыса һаҡлау — финанс хужалығын артабан нығытыуҙа етди шарттарҙың береһе ул. Был сараларҙы үткәреү колхоз средстволарын һаҡлау һәм экономиялы тотоноуға шарттар тыуҙыра. Быны аңлаған колхоз етәкселәре ауыл хужалығы Уставының 12-се статьяһын аныҡ үтәп, хужалыҡтың бөтә аҡса средстволарын государство банкылары аша үткәрәләр. Әбйәлил районы Шәймөрәтов, Молотов исемендәге һәм «8 Март» колхоздары етәкселәре был эштә өлгө күрһәтәләр. Был колхоздар үҙҙәренең бөтә аҡса операцияларын государство банкылары аша башҡаралар, улар быны закон итеп һаҡлайҙар.

Ләкин республикабыҙҙың күп кенә райондарында ҡайһы бер колхоздар ауыл хужалығы артеле Уставының 12-се статьяһын боҙалар, артыҡ аҡсаларын государство банкыһында һаҡламайҙар. Ә финанс дисциплинаһын боҙоп, колхоз кассаһында һаҡлайҙар һәм уларҙы тейешле документ буйынса тотонмайҙар, ә айырым кешеләрҙең распискалары буйынса тотонолар. Бындай хәл әле аңында капитализм ҡалдыҡтары бөтөрөлмәгән айырым кешеләрҙең колхоз средствоһына ҡул һуҙыуына, урлашыуына юл аса. Тикшереү һөҙөмтәһендә Белоҡатай районы «Завет Ильича», Бишбүләк районы М. Горький исемендәге колхоздарҙа ошондай енәйәт эштәрҙең барлығы асыҡланды.

Бындай етешһеҙлектәргә артабан юл ҡуйырға ярамай. Колхоз средстволарының һәр һум аҡсаһы ныҡлы контролдә булырға тейеш.

Дебитор бурыстарҙы бөтөрөү һәм уларҙы булдырыуға юл ҡуймау — колхоздарҙа финанс хужалығын нығытыуҙа мөһим шарт булып тора. Шуға ҡарамаҫтан, күп кенә промышленность предприятиеләре, сауҙа һәм әҙерләү ойошмаларының етәкселәре колхоздар менән үҙ ваҡытында иҫәп-хисап яһамайҙар. Колхоз средстволарын үҙ хужалыҡтары оборотында законһыҙ файҙаланып килеләр. Мәҫәлән, Башживконтора системаһындағы ойошмалар колхоздарға 92 мең, Сортсемовощь— 27 мең, Союззаготтранс — 24 мең һум бирәсәктәрен түләмәйҙәр. Шулай уҡ машина-трактор станциялары, потребкооперациялар, заготзерноҙар һәм ҡайһы бер башҡа ойошмалар колхоздарға ҙур суммаларға бурыслы булып торалар.

Совет хөкүмәте колхоздарға бик ҙур материаль-техник һәм финанс ярҙам күрһәтә. Государство банкыһы аша ғына колхоздарға производство саралары өсөн 1948 йылда 2 миллион 100 мең һум, 1949 йылда — 4 миллион 400 мең, 1950 йылда 8 миллион 500 мең һум кредит бирелде. 1951 йылда колхоздарға бирелеүгә планлаштырылған кредит суммаһы 8 миллион 938 мең һум тәшкил итә. Был сумманың 4 миллион 85 мең һумы бирелде лә инде.

Баҡалы, Мәсетле, Янауыл, Бозаяз һәм байтаҡ башҡа райондарҙың колхоздары хөкүмәт тарафынан бирелгән кредит аҡсаларын үҙ ваҡытында үҙләштереп килләр. Ләкин ҡайһы бер райондарҙа кредитҡа бирелгән аҡсаны насар үҙләштерәләр. Мәҫәлән, Әбйәлил районының колхоздарына кредитҡа бирелгән 106 мең һум аҡсаның бөгөнгә көнгә иң бары 36 меңе, Благовар районында — 147 мең һумдың 57 меңе, Йылайыр районында — 35 мең һумдың 3 меңе генә үҙләштерелгән. Был эш Илеш, Ғафури, Күгәрсен, Федоровка, Нуриман райондарында ла бик насар башҡарыла.

Колхоздарҙың финанс хужалығын нығытыуҙа государство банкылары работниктәре һәм район ауыл хужалығы бүлектәренең бухгалтер-ревизорҙары ҙур ярҙам күрһәтергә тейештәр. Улар ауыл хужалығы органдары менән берлектә колхоздарҙың экономикаһын өйрәнергә, һәр бер колхозды күп тармаҡлы, юғары тауарлы һәм доходлы хужалыҡ итеү буйынса саралар билдәләүҙә ҡатнашырға бурыслылар. Райондарҙың финанс ойошмалары работниктәренән колхоздар менән бәйләнеште көсәйтеүе, уларға иҫәп-хисап эштәрен юлға һалыуҙа, дебитор бирәсәктәрҙе юллап алыуҙа практик ярҙам күрһәтеү талап ителә.

Бөтә резервтарҙы тулы файҙаланыу, средстволарҙы экономиялы тотоноу һәм шуның нигеҙендә колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыу — 1951 йылда колхоздар алдында торған бурыстарҙы уңышлы үтәүҙә мөһим саралар булып тора.

А. Нурмаев,
Государство банкыһының Башҡортостан республика контораһының управляющийы.

Башҡорт АССР-ы колхоздарында бесән сабыу һәм силос һалыу барышы

(Пландар үтәлеше, 1951 йылдың 25 июненә, процентуарҙа)

Тотҡан урыны	Райондар	бесән сабылған	силос һалынған
1	Шишмә	47	50
2	Воскресен	41.2	49
3	Бозаяз	37.7	57
4	Мәләүез	37	9
5	Көйөргәҙе	36.2	4
6	Ҡырмыҫҡалы	35	16
7	Саҡмағош	31	39
8	Федоровка	31	18
9	Зианчура	31	15
10	Йомағужа	30	40
11	Туймазы	29	36
12	Ауырғазы	29	24
13	Благовар	28	48
14	Кушнаренко	28	32
15	Абзан	26	45
16	Стәрлетамаҡ	25.5	12
17	Әлшәй	23	24
18	Бәләбәй	21	52
19	Стәрлебаш	20.3	40
20	Бишбүләк	19	30
21	Благовещен	17	49
22	Өфө	17	26
23	Миәкә	17	25
24	Күгәрсен	17	15
25	Ҡандра	16	27
26	Йәрмәкәй	16	15
27	Маҡар	15	33
28	Балтач	14	49
29	Бөрө	14	34
30	Покровка	13.2	85
31	Ҡалтасы	13	58
32	Дүртөйлө	13	22
33	Хәйбулла	12	—
34	Борай	11	59
35	Иглин	11	37
36	Дәүләкән	11	11
37	Шаран	8	52
38	Илеш	8	29
39	Нуриман	7.4	63
40	Архангель	6.7	33
41	Матрай	6	5
42	Оло Теләк	5.7	43
43	Баймаҡ	5	18
44	Янауыл	4	45
45	Байҡыбаш	4	30
46	Мәсетле	3	40
47	Мишкә	2.1	41
48	Ғафури	2	28
49	Бүздәк	2	5
50	Дыуан	1.8	18
51	Баҡалы	1.8	17
52	Ҡариҙел	1.6	46
53	Краснокам	1.5	37
54	Ҡыйғы	1.1	65
55	Тәтешле	0.7	29
56	Белоҡатай	0.7	23
57	Салауат	—	23
58	Аҫҡын	—	16
59	Белорет	—	16
60	Учалы	—	12
61	Әбйәлил	—	5
62	Бөрйән	—	3
63	Йылайыр	—	—

Общественный малдарға стандарт торлаҡтар

Бөрйән районы Фрунзе исемендәге колхозда общественный малдар өсөн яңы стандарт торлаҡтар төҙөү эше ҡыҙыу бара.

Фермаларҙа йылҡы һәм быҙауҙар өсөн яңы һарайҙар һалыу тамамланды. Уларға 20 баш ат һәм 30 быҙау урынлаштырыласаҡ. Хәҙер 200 баш һарыҡ һыйҙырырлыҡ торлаҡ төҙөлә.

Д. Юлмөхәмәтов.

Пропагандистарға һәм марксистик-ленинсы теорияны өйрәнеүселәргә ярҙамға

БАЗИС ҺӘМ ӨҪҠОРМА ТУРАҺЫНДА ИПТӘШ И. В. СТАЛИН

И. В. Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән гениаль әҫәренең донъяға сығыуы илебеҙҙең идея тормошонда иң ҙур ваҡиға булып тора. Марр һәм уның шәкерттәренең хеҙмәттәрендә марксизмды вульгарлаштырыуҙы фаш итеп, иптәш Сталин тел ғилеменең ысын-ысынлап марксистик теорияһын барлыҡҡа килтерҙе. Шуның менән бергә, марксизм-ленинизмды байытып, иптәш Сталин тарихи материализмдың иң мөһим мәсьәләһен — базис һәм өҫҡорма тураһындағы мәсьәләне тәрән эшләп бирҙе. Иптәш Сталиндең тел ғилеме буйынса хеҙмәте ул — догматизмға, начетниклыҡҡа һәм талмудизмға ҡаршы килешмәүсән көрәш өлгөһө. Ул беҙҙе марксизмды ижади аңларға, уға ижади яҡын килергә өйрәтә.

* * *

Общественың үҫеш закондарын асып, Маркс менән Энгельс, материаль етештереүсе көстәр үҫешенең билдәле бер баҫҡысына тура килә торған етештереү мөнәсәбәттәренең йыйылмаһы общественың экономик структураһын, реаль базисты тәшкил итә, шуның өҫтөндә общественный өҫҡорма барлыҡҡа килә, тип күрһәттеләр.

Үҙенең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән хеҙмәтендә иптәш Сталин: «Базис ул — общественың ошо үҫеш этабындағы экономик төҙөлөшө», тип тәрән билдәләмә бирҙе.

Тарихта етештереү мөнәсәбәттәренең төп биш тибы, бишенсе биш тибы: беренсе община, ҡол биләүселек, феодаль, капиталистик һәм социалистик типтары билдәле.

Етештереү мөнәсәбәттәренең нигеҙе булып етештереү мөнәсәбәттәренең тибын билдәләүсе нәмә — производство средстволарына милек тора. Ҡол биләүселек ҡоролошонда етештереү мөнәсәбәттәренең нигеҙе булып производство средстволарына һәм производство работнигенә — ҡолға ҡол биләүсенең милке тора; феодаль ҡоролош ваҡытында—производство средстволарына феодалдең тулы милке һәм производство работнигенә —крепостной крәстиәнгә тулы булмаған милке тора; капиталистик ҡоролош ваҡытында етештереү мөнәсәбәттәренең нигеҙе булып капиталистең производство средстволарына милке тора, производство работнигенә — эшсе уның милке булмай инде.

Етештереүҙең икенсе яғын етештереүсе көстәр — материаль байлыҡтар етештереүгә ярҙам итә торған производство ҡоралдарын хәрәкәткә килтерә, материаль байлыҡтар етештерә торған кешеләр тәшкил итәләр.

Иптәш Сталин етештереү һәр ваҡыт үҙгәреп, үҫеп тора, тип өйрәтә. Шуның менән бергә етештереүҙең үҙгәреүе һәм үҫеше етештереүҙең айырыуса хәрәкәтсән һәм революцион элементы булып торған етештереүсе көстәрҙең үҙгәреүенән һәм үҫеүенән башлана.

Етештереүсе көстәр һәм етештереү мөнәсәбәттәре үҙгәреү диалектикаһын асып биреп, иптәш Сталин, етештереү мөнәсәбәттәре үҙ нәүбәтендә етештереүсе көстәрҙең үҫешенә йоғонто яһайҙар, был үҫеште тиҙләтәләр, йәки аҡрынайталар, тип күрһәтә. «Шуның менән бергә, — ти иптәш Сталин, — етештереү мөнәсәбәттәре етештереүсе көстәрҙең үҫешенән артыҡ оҙаҡ артта ҡала алмайҙар һәм улар менән ҡаршылыҡҡа хәлдә артыҡ оҙаҡ тора алмайҙар, сөнки етештереү мөнәсәбәттәре етештереүсе көстәрҙең характерына, торошона тура килгәндә генә һәм етештереүсе көстәр үҫешенә иркенлек биргәндә генә етештереүсе көстәр тулы күләмдә үҫә алалар. Шуныҡтан, етештереү мөнәсәбәттәре етештереүсе көстәрҙең үҫешенән ни тиклем генә артта ҡалмаһындар, улар—иртәме йәки һуңмы — етештереүсе көстәрҙең үҫеш кимәленә, етештереүсе көстәрҙең характерына ярашлашырға тейештәр—һәм ысынында ла яраҡлашалар. Шулай булмағанда, беҙ етештереү системаһында етештереүсе көстәрҙең һәм етештереү мөнәсәбәттәренең берҙәмлеге тамырынан боҙолоуҙы, бөтә етештереүҙең өҙөлөүен, етештереү кризисын, етештереүсе көстәрҙең емерелеүен күрер инек». (И. Сталин, «Ленинизм мәсьәләләре», 11 баҫма, 553-сө бит).

Бер общественный ҡоролоштон икенсе ҡоролош, бер базистың икенсе базис менән алмашыныуының тарихи процесс нигеҙендә етештереүсе көстәрҙең үҫеше ята. Яңы етештереүсе көстәр менән уларҙың үҫешенә тотҡарлыҡ итеүсе иҫке етештереү мөнәсәбәттәре араһындағы ҡаршылыҡ общество үҫешенең тарихи һәр бер этабында инде искергән етештереү мөнәсәбәттәрен бөтөрөүҙе, иҫке базисты, уның өҫтөндәге өҫҡорманы бөтөрөүҙе талап итә. Ҡол биләүселек феодаль ҡоролош менән, феодаль ҡоролош капитализм менән алмашынды. Капиталистик ҡоролош СССР-ҙа социалистик ҡоролош менән алмашынды. Социализмға тиклем булған формацияларҙың һәр береһенең базисы етештереүсе көстәрҙең үҫешенә ярҙам итеп килгән саҡта, ул, нигеҙҙә, прогрессив роль уйнаны. Ләкин етештереүсе көстәр үҫә барған һайын, был инде үҫеш формаһынан уның быуауы булып әүерелгән ошо базис реакцион фактор булып ҡала.

Социалистик базис эксплуататорҙар общество һы базисынан тамырҙан һәм принципиаль айырыла. Социализм ваҡытында етештереү мөнәсәбәттәренең нигеҙе булып производство средстволарына общество милке тора. Бында кешенең кешене эксплуатациялауы юҡ. Етештереү процесында кешеләр мөнәсәбәтенең нигеҙе булып иптәштәрсә һәм социалистик үҙ-ара ярҙам тора. Етештереүҙең үҙенең үҫеш хәрәкәте тамырынан үҙгәрә. Етештереүсе көстәр менән етештереү мөнәсәбәттәре араһындағы ҡаршылыҡ бөтә. Кешелек тарихында беренсе башлап етештереү мөнәсәбәттәре менән етештереүсе көстәрҙең бер-береһенә тулыһынса тура килеүе урынлаштырыла — етештереү процесының общественный характеры производство средстволарына булған общество милке менән нығытыла. Социализм етештереү мөнәсәбәттәренең етештереүсе көстәр характерына тулыһынса тура килеүе социализм ваҡытында етештереүсе көстәрҙең коммунизмға күсеүҙе тәьмин итеүсе ирекле һәм сикләнмәгән үҫеүе өсөн шарттар тыуҙыра. Етештереүсе көстәрҙең бынан һуңғы үҫеше, социализмға тиклем булған общественный формацияларҙағы кеүек, етештереү мөнәсәбәттәре алмашыныуын талап итмәй инде.

Социализм ваҡытында етештереүсе көстәрҙең үҫеүе социалистик етештереү мөнәсәбәттәрен нығыта, был мөнәсәбәттәрҙең юғары баҫҡысҡа күсеүен, уларҙың коммунистик обществолағы етештереү мөнәсәбәттәренә әйләнеүен тәьмин итә. Социализмдан элек булған бөтә общественный-экономик формацияларҙа общественың үҫеше стихиялы хәрәкәт итеүсе экономик закондар нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Совет социалистик обществоһының үҫешенә партияның һәм Совет государствоһының политикаһы менән йүнәлеш бирелә. Был политика совет ҡоролошоноң тормош нигеҙе булып тора. Общественың үҫеш закондары белеменә таянып, партия һәм Совет государствоһы совет кешеләрен коммунизм төҙөүгә туплай һәм ойоштора.

Пролетариат диктатураһын урынлаштыра һәм етештереүҙең яңы социалистик ысулын ойошторғанда, эшселәр синыфы капитализм ваҡытында барлыҡҡа килтерелгән етештереүсе көстәрҙе, фән һәм техника ҡаҙаныштарын файҙалана. Капитализм ваҡытында ирешелгән фән һәм техника ҡаҙаныштарын файҙаланыуға ҡаршы сыҡҡан «марксистарҙың» общество ға примитив-анархистик ҡарашын иптәш Сталин бик ныҡ тәнҡит итте: «Беҙҙә бер ваҡыт, Октябрь переворотынан һуң беҙҙең илебеҙҙә ҡалған тимер юлдар буржуаз тимер юлдар булып торалар, беҙгә, марксистарға, уларҙы ҡулланырға ярамай, уларҙы һүтеп ташларға һәм яңы «пролетар» юлдар һалырға кәрәк, тип раҫлаусы «марксистар» бар ине. Быны өсөн уларға «троглодит» ҡушаматы бирелгәйне...» («Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре», 18—19-сы биттәр).

* * *

«Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән хеҙмәтендә иптәш Сталин марксизм-ленинизмды алға үстереп, өҫҡормаға классик билдәләмә бирҙе: «Өҫҡорма ул — общественың политик, хоҡуки, дини, художестволы, философик ҡараштары һәм уның шул ҡараштарға ярашлы политик, хоҡуки һәм башҡа учреждениеләре» тинә ул (шунда уҡ, 5-се бит).

Был учреждениеләр араһында мөһим урынды государство алып тора.

Иптәш Сталин базистең өҫҡормаға ҡарата булған ролен бик асыҡ күрһәтеп бирә.

«Һәр бер базистең, үҙенә ярашлы өҫҡормаһы бар. Феодаль ҡоролош базисының үҙенең өҫҡормаһы, үҙенең политик, хоҡуки һәм башҡа ҡараштары һәм шуларға ярашлы учреждениеләре бар, капиталистик базистең үҙенең өҫҡормаһы бар, социалистик базистең үҙенең өҫҡормаһы бар. Әгәр базистар үҙгәрә һәм бөтөрөлә икән, уның артынан был базистең өҫҡормаһы ла үҙгәрә һәм бөтөрөлә, әгәр яңы базис барлыҡҡа килә икән, уның артынан был яңы базисҡа ярашлы өҫҡорма ла барлыҡҡа килә» (шунда уҡ, 5—6-сы биттәр). Өҫҡорма — билдәле бер экономик базис йәшәй һәм эш итә торған бер эпоханың продукты ул. Ләкин был өҫҡорма үҙ нәүбәтендә базисҡа йоғонто яһамай, тигән һүҙ түгел әле. Иптәш Сталин общественың үҫешендә өҫҡорманың ғәйәт ҙур актив роль уйнауын күрһәтеп бирә.

«Өҫҡорманы базис тыуҙыра, ләкин был һис тә өҫҡорма базисты сағылдыра ғына тигән һүҙ түгел, өҫҡорма—пассив, нейтраль, ул үҙ базисының яҙмышына, синыфтарҙың яҙмышына, ҡоролоштоң характерына айырмаһыҙ ҡарай, тигән һүҙ түгел. Киреһенсә, өҫҡорма барлыҡҡа килеү менән

Бүздәк бертөкле ашлыҡ совхозында механизаторҙар урожай йыйнауға яҡшы әҙерләнделәр. Һүрәттә: (һулдан уңға) Талип Алпаров, Баһаутдин Алпаров, Семен Лазаренко (өлкән механик) һәм Талғат Алпаров иптәштәр ремонтланған комбайн янында.

А. Зарзев фотоһы.

Комбайнерҙарҙың йөкләмәләре

Күгәрсен МТС-ы (директоры иптәш Хажиморатов) комбайнерҙәре Социалистик Хеҙмәт Геройы, комбайнер иптәш Арслан Кирәевтең хатын өйрәнделәр һәм социалистик йөкләмәләр алдылар.

«Сталинец—6» комбайнында эшләүсе иптәш В. Колядин Тельман исемендәге колхозда быйыл 800 гектар майҙандың урожайын 30 эш көнөндә йыйнарға һәм яғыулыҡҡа 10 процент экономия яһарға йөкләмә алды.

Район Советы депутаты иптәш Л. Зотов шулай уҡ «Сталинец—6» комбайны менән 800 гектар майҙандың урожайын йыйнарға, яғыулыҡҡа 10 процент экономия яһарға һүҙ бирҙе. Комбайнерҙарҙан Богданов, Хәлитов, Казаков, Буянов, Гаврилов, Ғафаров, Первушкин иптәштәр ҙә социалистик ярышҡа сыҡтылар.

Х. Дәүләтшин.

Урожай йыйнауға әҙерлектә

Стәрлетамаҡ районы колхоздарында урожай йыйнауға әҙерлек алып барыла. 33 колхозда ябмалы 127 ырҙын. 43 урында иген киптергес төҙәлә һәм ремонтланды. Был эш Жданов исемендәге колхозда айырыуса яҡшы бара. Бында 6 яңы ябмалы ырҙын һәм бер иген киптергес төҙәлде. «Просвет» колхозында ла 4 ырҙында ябмалар төҙәлә.

Быйыл ашлыҡ һуғыуҙа электр көсөн киң ҡулланыу күҙҙә тотола. 13 колхоздың бөтә ябмалы ырҙындары ла электрләштерелә. Уларға 35 электр моторы ҡуйыла. Уның көсө ашлыҡ һуғыуҙа, иген таҙартыуҙа файҙаланыласаҡ.

А. Климентьев.

Урман полосаларын тәрбиәләүҙә

Баймаҡ. Райондағы колхоздарҙа баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу эше, үткән йылғыға ҡарағанда, яҡшыраҡ үтәлде. Колхоздар буйынса 80 гектар, район лесхозы работниктары тарафынан 525 гектар майҙанда ағас ултыртылды. Уларҙы тәрбиәләүҙә махсус бригадалар эшләй.

И. Зарипов.

Башҡорт АССР-ы МТС-тарында комбайндар ремонтлау барышы

(План үтәлеше, 1951 йылдың 25 июненә, проценттарҙа)

Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған
1	Шаранбаш-Кнәз	170	48	Ҡалмыҡ	76	95	Усть-икин	65
2	Октябрьский	119	49	Маҡар	75	96	Зәбельск	65
3	Сынташтамаҡ	112	50	Абзан	75	97	Бураы	65
4	Подгорный	111	51	Калинин	75	98	Ярославка	64
5	Благовар	106	52	Петровск	74	99	Ҡырмыҫҡалы	64
6	Суйынсы	103	53	Бәрә	74	100	Учалы	64
7	Йылайыр	100	54	Тәтешле	73	101	Туймазы	63
8	Дәүләкән	100	55	Шаран	73	102	Стәрлетамаҡ	62
9	Ҡарамалы Ғәбәй	100	56	Ҡыйғы	72	103	Сәрмән	62
10	Баймаҡ	100	57	Покровка	72	104	Үрмиәз	60
11	Матрай	100	58	Аксен	72	105	Дыуан	60
12	Борай	100	59	Баҡалы	72	106	Полянск	60
13	Пәрләй	100	60	Ново-Троицк	72	107	Бишбүләк	60
14	Яҡалы	100	61	Әбдрәшит	71	108	Приют	60
15	Яңауыл	100	62	Пәрмәкәй	71	109	Ҡандра	60
16	Степняковка	94	63	Һурон	71	110	Орловка	60
17	Әбйрәзәк	93	64	Ерган	70	111	Ҡарлин	59
18	Ишле	92	65	Һуҡайлыҡ	70	112	Шишмә	59
19	Бишенде	90	66	Языково	70	113	Мрәсем	58
20	Ҡарлыхан	89	67	Миәкә	70	114	Арҡауыл	58
21	Илиш	89	68	Байыш	70	115	Усалы	58
22	Үләй	86	69	Андреевка	70	116	Буләк	58
23	Ҡалтасы	85	70	Моторный	70	117	Ҡарпәел	57
24	Ортаҡо	85	71	Нуриман	69	118	Таутаман	57
25	Мәсәгүт	83	72	Ташлыкүл	69	119	Бүзәй	56
26	Дуран	83	73	Ҡош-Йылға	69	120	Ҡасау	56
27	Тәләкәй	83	74	Һарыҡул	69	121	Кушнаренко	56
28	Режап	82	75	Красноҡам	69	122	Дмитриевка	56
29	Ямаш	81	76	Чүрәй	69	123	Балтач	55
30	Арслан	81	77	Саҡмағош	69	124	Әлмөхәмәт	55
31	Михайловка	81	78	Путачев	68	125	Миңкә	55
32	Байғужа	81	79	Аслыкүл	68	126	Илдәр	52
33	Бажер	80	80	Дүртөйлө	68	127	Мәсетле	50
34	Ҡорос	80	81	Имәнлекүл	68	128	Бәләбәй	50
35	Аит	80	82	Шланлы	67	129	Бүздәк	50
36	Хәйбирҙин	80	83	Таймас	67	130	Ерәкле	50
37	Һуҡкүл	80	84	Чапаев	67	131	Яңғыҙ Ҡайын	49
38	Ташлы	78	85	Степной	67	132	Стәрлебаш	48
39	Ҡаран	78	86	Шәрән	67	133	Усень-Ивановка	48
40	Мраҡ	78	87	Әбйәлил	67	134	Подлуб	46
41	Түкмәкәлы	78	88	Сибай	67	135	Архангель	45
42	Күпрәк	77	89	Һаҡмар	67	136	Охлебинин	45
43	Күгәрсен	77	90	Хәйбулла	67	137	Малояз	44
44	Пәнәгет	77	91	Белокатай	66	138	Малаяз	42
45	Аскын	76	92	Бүрәм	66	139	Байрамғол	41
46	Федоровка	76	93	Ермолаевка	66	140	Оло Теләк	36
47	Базан	76	94	Байҡы	65			

Октябрьскийҙән хаттар

4. Рус теле

Октябрьский ҡалаһының 11-се номерле мәктәп директоры иптәш Арсланов ғорурлыҡ менән:

— Ошо яҙма эштәргә ҡарағыҙ әле, — тине.

Дәфтәрҙең 8 битендә уҡыусы Ф. Сәлихова: «Бөйөк Ватан һуғышында комсомол» тигән темаға Александр Фадеевтың «Йәш гвардия» романы буйынса матур, тигеҙ итеп экзаменацион эш яҙған. Уҡыусының теле бай һәм грамоталы, сочинениe ҡыҫҡа һәм йөкмәткеле итеп төҙөлгән, ул ҡыҙыҡлы цитаталарҙы һәм сағыштырыуҙарҙы файҙаланған.

— Латипованың, Шаимованың эштәрен уҡып ҡарағыҙ...

Яңы сочинениеләрҙе уҡығандан һуң, был мәктәптә уҡыусыларҙың рус теле буйынса белемдәренең юғары кимәлдә булыуҙарын ҙур шатлыҡ менән билдәләйһең. Ошоно ғына әйтеү ҙә етә: өлгөргәнлек аттестатына экзамен биреүсе 14 уҡыусының бөтәһе лә рус теле буйынса экзаменде уңышлы тапшырҙылар.

— Бынан бер нисә йыл элек, тиҙәр, — мәктәптең уҡытыусылары, — үҙебеҙҙең мәктәпте тамамлап сыҡҡан уҡыусыларҙы Өфөгә йәки үҙебеҙ менән күршеләге Бөгөлмәгә уҡырға ебәреп, уларҙың унда экзамен бирә алырҙармы икән тип тулҡынланыу менән хәбәр көтә торғайныҡ. Был хәҙер беҙҙең өсөн хәл ителгән мәсьәлә инде: уларҙың бөтәһе лә тип әйтерлек теләһә ниндәй һынауҙарҙы уңышлы тапшыралар...

Ленин һәм Сталин теле, Пушкин һәм Толстой теле, Горький һәм Маяковский теле хеҙмәттең һәм хеҙмәттең гүзәл ҡоралы булып тора, ул белемдәрҙең һәм культураның юғары ҡаҙаныштарына эйә булырға ярҙам итә, совет кешеләре араһындағы дуҫлыҡты нығытыуға юл һала.

Башҡортостандың нефтселәре араһында, бөтә ерҙә лә башҡорттар һәм татарҙар араһында бөйөк рус теленә, уның байлығын өйрәнеүгә ҡарата бик ҙур ынтылышты һәр көн һайын һәм сәғәт һайын күрергә мөмкин. Хәҙер инде Октябрьский ҡалаһының окраинаһы булып әйерелгән элекке Нарыш, Муллино, Төркмәнтау, Заит ауылдары рус телендәге ваҡытлы матбуғатты, бында нефть промышленносе предприятиеләре барлыҡҡа килгәнгә тиклемге осор менән сағыштырғанда, бер нисә тапҡырға артығыраҡ алалар. Борауылау мастерҙарының һәм вышка төҙөүселәрҙең, разведкала һәм транспортта эшләүсе башҡорт һәм татар милләте кешеләренең балалары ас телендә баҫылған китаптар менән бер рәттән, Шолоховтың һәм Фадеевтең, Пришвиндең һәм Симоновтың, Эренбургтың һәм Твардовскийҙең рус телендәге әҫәрҙәрен ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм мөхәббәт менән уҡыйҙар. Нефтселәрҙең йорттарында үҙҙәренең библиотекалары барлыҡҡа килде.

«Икенсе Баку» нефтселәре коллективының культура кимәле һәр йыл һайын өҙлекһеҙ күтәрелә. Башҡорт һәм татар милләтенән булған ябай эшселәрҙең рус телендә ҙур телмәрҙәр һәм ялҡынлы һүҙҙәр менән сығыш яһауҙарын бик йыш күрергә мөмкин. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаты ябай бораулаусы иптәш Ғимаевтың һуңғы сессияла яһаған сығышы ҙур йоғонто ҡалдырҙы. Кисәге аҙ грамоталы крәҫтиән, һуңынан нефть промышленносенә эшкә күскән Ғимаев ҙур аудитория алдында үҙе тураһында, үҙенең бригадаһы тураһында, тыуған ҡалаһы тураһында, нефтселәр тураһында бик асыҡ итеп рус телендә ҡайнар телмәр һөйләне...

— Мин түбәһе һалам менән ябылған өйҙә тыуҙым, — тине ул. — Мин хәҙер түбәһе шифр менән ябылған өйҙә торам. Мин тыуған йылда Башҡортостандың бөтә ауылдарындағы врачтар һаны хәҙерге беҙҙең бер Октябрьский ҡалаһында булған врачтар һанынан да аҙыраҡ иҫәпләнгән.

Ярлы игенсе улын, крепостной крәҫтиән улының улын бөтә Башҡортостан иғтибар менән тыңланы, ул үҙенең олған туғанының телендә телмәр һөйләне.

Милли эшселәрҙең культура үҫешендә булған ҡыҙыҡлы күренештәрҙе Башҡортостан нефтенең башҡалаһында ойошторолған торған лекторийҙарҙа бик йыш күрергә мөмкин. Бынан бер нисә йыл элек кенә әле ябай башҡорт йәки татар эшсеһенең ҙур һәм квалификациялы телмәрҙәр менән һәм махсус докладтар менән сығыш яһауын күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын ине. Хәҙер Октябрьскийҙа бындай лекциялар һәм докладтар ябай һәм көндәлек бер күренешкә әйерелде.

Монтаж управлениеһының электросварщиге иптәш Юнусов үҙенең тәжрибәһе тураһында гүзәл доклад яһаны. Ҡаюм Иктисамовтың «Машинаны капиталь ремонтһыҙ 110 мең километр йөрөтөү» тигән докладын ҙур отклик тапты. Бораулау мастеры Ҡасим Белялиновтың «Минең бригадам нисек итеп юғары тиҙлеккә өлгәште» тигән лекцияһы бораулау эшселәре араһында ҙур уңышлыҡ менән үтте.

Мин бынан бер ни тиклем элек тракторист иптәш Фәтхетдинов яһаған ҡыҙыҡлы бер лекция тураһында һөйләргә теләйем.

Көн һайынғы нефть вышкалары араһында, таулыҡ буйынса бер туҡтауһыҙ ҙур «ЗИС»-тар һәм тиҙ йөрөүсе «ГАЗ»-дар арлы-бирле үтеп торған асфальт юл менән йәнәшәлә ағастан эшләнгән бер йорт бар. Бөгөн бында ҙур йәнлелек. Ишеккә: «Ете сәғәттә тракторист иптәш Фәтхетдиновтың «Мин тракторҙың ремонт ара йөрөшен нисек итеп оҙайттым» тигән темала докладын була», тип яҙылған белдереү эленеп тора.

Киске тап сәғәт 7-лә бүлмә эшселәр менән тулды. Бераҙҙар өҫкө кейемдәрен алыштырып кейгәндәр, икенселәр тура эштән килгәндәр. Өҫтәл артында докладсы үҙе, ҡара сәсле, урта буйлы, ап-аҡ күлдәк, ҡара костюм кейгән егет ултыра.

Бүлмәлә тыңлыҡ урынлашыу менән докладсы аҡрын ғына урынынан торҙо, әйтерһең дә бөтә ғүмере буйына доклад һөйләү менән шөғөлләнгән кеше кеүек, бик ирекле генә һөйләй башланы. Ул ашыҡмай ғына асыҡ итеп һөйләй:

— Мин эшләгән С—80 тракторы Челябе заводынан 1948 йылдың сентябрь айында алынды. Мин уны 1948 йылдың сентябрь айында ҡабул итеп алып, 1951 йылдың май айына тиклем арымдағы һәм капиталь ремонтһыҙ, капиталь ремонт араһындағы срокта норма буйынса 2800 машина-сәғәт эшләү урынына, 8494 машина-сәғәт эшләнем. Шулай итеп мин тракторҙың ремонт ара осорондағы эшен ас тапҡырға арттырыуға өлгәштем...

Зал уны ҙур иғтибар менән тыңлай. Уларҙың бөтәһе лә Туймазы шарттарында бының бик яҡшы, шул уҡ ваҡытта бер кем тарафынан да өлгәшелмәгән рекорд икәнлеген яҡшы беләләр. Трактористең ошо рекордты ҡуйыуға нисек өлгәшкәнлеге тураһында үҙенән ишетеүе ҡыҙыҡлы ине. Тракторист Ермолаев докладсыға төбәлеп ҡарап ҡуйҙы. Тракторист Сирайтдинов та нәмәләр әйтергә теләп, өлгөрмәй ҡалды...

Докладсы үҙ эш тәжрибәһе тураһында һөйләүен дауам итте. Ул һөйләгән тема тотош бер фән ине. Ул мәҫәлән, «трактор таҙалыҡты ярата» тип расланы, «трактор механизмдарын саң инеүҙән һаҡларға» кәңәш итте.

Алдағы ултырғыста докладсыға йылмайыулы ҡараш ташлап цех начальнигы Семен Кузьмич Будашкин ултыра. Ул үҙе тәрбиәләгән кешенә ҡыҙыҡһынып һәм бирелеп тыңлай. Бәлки ул ошо егеттең рус телендә бер ҡуш һүҙ ҙә һөйләй ҙә әйтә алмаған ваҡыты тураһында уйлай торғандыр, ә хәҙер тыңлап ҡара...

— Үҙ ваҡытында ҡуйылған йәки алыштырылған болт тракторҙы һәр төрлө «осраҡлы аварияларҙан» һаҡлай, тип һөйләүен дауам итте Фәтхетдинов. Мин тракторҙы һәр ваҡытта ла тикшерәм, туҡталырға тура килгән һайын тикшереп таҙартып торам.

Үҙенең ярты сәғәт дауам иткән докладын ул ошо һүҙҙәр менән тамамланы.

— Минең трактор нормаль эшләүен дауам итә. Уның бөтә узелдары артабан эшләү өсөн тулыһы менән яраҡлы. Мин үҙемдең тракторымды капиталь ремонтҡа тиклем тағы ла 1500 машина-сәғәт эшләргә һәм ремонт ара осорҙо 10.000 сәғәткә еткерергә йөкләмә алам...

Кеслә ҡул сабыуҙар ойошторолдо. Агафонов түҙеп тора алманы.

— Шәп, бик шәп, тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Тракторист Булик ҡапыл ҡысҡырып:

— Мин дә ошондай уҡ доклад һөйләй алыр инем, тине.

Лекцияны йомғаҡлап, бораулау контораһы инженеры, бөтә трактористарҙы Фәтхетдиновтың гүзәл эш алымын интеренсән эшләргә саҡырҙы.

Нефтселәрҙән кем менән һөйләшһәң дә улар:

— Рус теле беҙҙең өсөн тәрбиәләүҙең, уҡыуҙың, культураның, беҙҙең дуҫлығыбыҙҙы үҫтереүҙең ҡеүәтле ҡоралы булып әйерелде, — тиҙәр.

Нефтселәр араһында һәр көн, һәр сәғәт һайын эшселәр менән ғалимдар араһында, өлкән быуын менән йәш быуын араһында, рустар менән башҡорттар араһында, татарҙар менән украинецтар араһында гүзәл дуҫлыҡ ҡаҙаныштарын күрәһең.

Ә. Бикчәнтәев.

Заводта лекторий

Өфө нефть эшкәртеү заводында политик, һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса общество эшләй. Унда инженер-техник работниктарҙан бөтәһе 60 кеше член булып тора. Улар эшселәрҙең киң ҡатламы араһында фән һәм техника яңылыҡтарын, СССР-ҙың эске һәм тышҡы политикаһын һәм халыҡ-ара хәлде аңлатыу буйынса бик ҙур эш алып баралар. Общество завод эргәһендә үҙенең даими хәрәкәт итә торған лекторийын ойошторған. Бында план буйынса һәр бер кесаҙна көндә лекциялар уҡыла. Мәҫәлән, беренсе кварталда нефть эшкәртеү буйынса лекциялар циклын үткәреү планлаштырылғайны. Ул уңышлы үтәлде. Общество члены — техника фәндәре кандидаты иптәш Эгенсон «Нефть эшкәртеүҙе тәрәнәйтеү юлдары» тигән темаға, Сталин премияһы лауреаты — инженер иптәш Новокшенов «Нефть газдарын эшкәртеү», техника фәндәре кандидаты иптәш Сорокин «Каталик крекинг яңылыҡтары» тигән темаларға лекциялар уҡыйлар.

Былардан тыш общество члендәре туранан-тура цехтарҙа һәм дейем торлаҡтарҙа лекциялар менән сығыш яһайҙар.

М. Мостафин.

бик ҙур актив көскә әйләнә, үҙенең базисына формалашырға һәм нығырға актив ярҙам итә, иҫке базисты һәм иҫке синыфтарҙы тамам хәлдән тайҙырыуға һәм бөтөрөүҙә яңы ҡоролошҡа ярҙам итеү өсөн бөтә сараларҙы күрә» (шунда уҡ, 7-се бит).

Өҫҡорма базисҡа хеҙмәт итеү өсөн базис тарафынан тыуҙырыла ла. Өҫҡорма үҙенең был хеҙмәт ролөнән баш тарттымы, өҫҡорма базисҡа айырмаһыҙ ҡарау позицияһына, синыфтарға бер үк төрлө ҡарау позицияһына баҫтымы, ул шунда уҡ үҙенең сифатын юғалта һәм өҫҡорма булыуҙан туҡтай, ти иптәш Сталин.

Өҫҡорманың базисҡа, общественың үҫешенә таҡсир прогрессив та, реакцион да булыуы мөмкин. Өҫҡорма үҙ базисына формалашырға һәм нығырға ярҙам итә, иҫке базисты һәм иҫке синыфтарҙы тамам бөтөрөүҙә һәм етештереүсе көстәрҙең үҫешен тәьмин итеүҙә ярҙам итә икән, ул ингеҙҙә тарихи прогрессив роль уйнай, общественың материаль тормошонон өлгөрөп еткән бурыстарын хәл итеүгә ярҙам итә. Ләкин етештереү мөнәсәбәттәренең эшсе осорҙағы тибы етештереүсе көстәрҙе үҫтереү формаһынан уларҙың быуауына әйләнсә, хәл бөтөнләй үҙгәрә. Үҙенең ғүмерен бөтөргән базисты яҡлағанда, общественың материаль тормош үҫешенең өлгөрөп еткән бурыстарын хәл итеүгә юл ҡуймаҫҡа тырышҡанда, өҫҡорма актив реакцион көс сифатында хәрәкәт итә. Хәҙерге империалистик государство бының асыҡ миҫалы булып тора. Экономик яҡтан империализм пролетар революцияһы өсөн өлгөрөп етте. Ләкин был үтәнән-үтә серегән система үҙенең политик өҫҡормаһы — империалистик государство уны һаҡлағанға күрә генә ҡалып килә, был империалистик государство пролетариаттың һәм хеҙмәтсәндәр массаларының революцион көрәшен баҫтыра, һәләк булыуға дусар ителгән капитализмды теләһә ниндәй хаҡҡа тешереп булһа ла һаҡлап ҡалырға тырыша. Уолл-стрит монополистары бөтә донъяға хакимлекте урынлаштырыу өсөн көрәшкәндә, үҙҙәренең государствоһын бөтә прогрессив элементтарға ҡаршы, беренсе нәүбәттә компартияға ҡаршы ҡаты яҙалар ҡулланыу өсөн файҙаланалар, хәрби шауышыу күтәрәләр. Корея баҫып алыу һуғышын алып баралар һәм Советтар Союзына ҡаршы һуғыш әҙерләйҙәр.

Капиталисты шарттарында эшселәр синыфының бөйөк юлбашсылары һәм остаздары Маркс, Энгельс, Ленин һәм Сталин берәм-бер фәнни общественный теорияны, марксизм-ленинизм теорияһын эшләнеләр, эшселәр синыфын капитализмға ҡаршы көрәштең, коммунизм өсөн көрәштең ҡеүәтле идея ҡоралы менән ҡоралландырҙылар. Ленин һәм Сталин бөйөк революцион партияны — большевиктар партияһын тәҙенеләр, был партия эшселәр синыфын капитализмға һәм помещиктарға ҡаршы көрәшкә ойошторҙо, эксплуатацияланыусы хеҙмәтсәндәр массаларын эшселәр синыфы тирәһенә тупланы. Массаларҙың революцион ижади политик көрәшенән Советтар кеүек формаларын ялға күйҙы, Октябрь революцияһы еңгәндән һуң Советтар пролетариат диктатураһының государство формаһы булып әйерелделәр. Большевиктар партияһы етәкселегендә эшселәр синыфы һәм хеҙмәтсәндәр массалары иҫке базисҡа һәм иҫке өҫҡормаға ҡаршы көрәш алып барҙылар. Бөйөк Октябрь революцияһы яңы политик өҫҡорманың — Совет Социалистик государствоһын башланғысын һалды.

Капитализмдан коммунизмға күсеү осоронда политик өҫҡорма — государство яңы, айырым роль уйнай. Политик өҫҡорманың был айырым роле пролетариат диктатураһы алдында торған тарихи бурыстар менән билдәләнә.

Феодаль общественың үҙ эсендә үҫкән һәм барлыҡҡа килгән капиталистик базистан айырмалы рәүештә, социалистик базис пролетар революцияһынан һуң ғына барлыҡҡа килә. Етештереүсе көстәрҙең үҫешендә капитализм ваҡытында өлгәшелгән кимәл социалистик базисты ойоштороу өсөн кәрәкле булған материаль шарттарҙы әҙерләй.

Социалистик базис стихиялы рәүештә түгел, стихиялы рәүештә хәрәкәт иткән экономик законлыҡтың һөҙөмтәһе рәүешендә түгел, бәлки общественың үҫеш закондарына таянған политик властең мәҡсәтҡа юнәлешле һәм планлы эше барышында ғына барлыҡҡа килә.

Яңы, социалистик базисты төҙөү шарты булып иҫке буржуаз государство машинаһын емереү һәм уны яңы, Совет государствоһы машинаһы менән алмаштырыу тора.

Өҫҡорма булғаны хәлдә, Совет государствоһы яңы базисты ойоштора, уға формалашыуҙа һәм нығыуҙа, иҫке базисты һәм эксплуататор синыфтарҙы бөтөрөүҙә ярҙам итә.

Совет государствоһының төп фазалары, төп бурыстары һәм функциялары тураһындағы сталинсе положениелар Совет государствоһының хеҙмәтсәндәре ҡулында эксплуататорҙарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүен баҫтырыу өсөн, иҫке базисты бөтөрөү һәм яңы базисты ойоштороу өсөн, беҙҙең илебеҙҙә социализм һәм коммунизм төҙөү өсөн, совет общественың тышҡы дошмандарҙан һаҡлау өсөн төп ҡорал булыу ағымын тарихи ролен бик асыҡ асып бирә.

СССР-ҙа яңы социалистик базистың һәм яңы социалистик өҫҡорманың барлыҡҡа килеү процесен һүрәтләп иптәш Сталин былай ти: «Һуңғы 30 йыл эсендә Россияла иҫке, капиталистик базис бөтөрөлдө һәм яңы, социалистик базис төҙөлдө. Шуға ярашлы рәүештә капиталистик базистең өҫҡормаһы бөтөрөлдө һәм социалистик базисҡа ярашлы яңы өҫҡорма барлыҡҡа килтерелде. Тимәк, иҫке, политик, хоҡуҡи һәм башҡа учреждениелар яңы, социалистик учреждениелар менән алмаштырылды» (шунда уҡ, 6-сы бит).

Социалистик государство үҫешенең беренсе фазаһы шарттарында бәреп төшөрөлгән эксплуататорҙарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүе баҫтырыла, эксплуататор синыфтар бөтөрөләләр, яңы, социалистик хужалыҡтың үҙәктәре барлыҡҡа килә. Производство средстволарына социалистик милек нигеҙендә, промышленноста яңы, социалистик базис һәм ауылда иң һығылмалы ер төҙөлөшө барлыҡҡа килә. Тотош коллективлаштырыу нигеҙендә кулактарҙы синыф булыу яғынан бөтөрөү политикаһы совет общественың яңы сифат хәленә һикереш яһауын, Совет государствоһының үҙ үҫешенең икенсе фазаһына күсеүен аңлата. Иптәш Сталин, яңы, социалистик базисты ойоштороу һәм ауылда буржуаз-хужалыҡ ҡоролошон бөтөрөү эшендә Совет государствоһының гигант роль уйнауын күрһәтә.

«Беҙ илебеҙҙең ауыл хужалығында 8 — 10 йыл эсендә буржуаз индивидуаль крәҫтиән ҡоролошонан социалистик колхоз ҡоролошона күсеүҙе тормошҡа ашырҙыҡ. Ул — ауылда иҫке, буржуаз хужалыҡ ҡоролошон бөтөргән һәм яңы, социалистик ҡоролошто барлыҡҡа килтергән революция булды. Ләкин был переворот шартлау юлы менән түгел, йәғни йәшәп килгән властә бәреп төшөрөү һәм яңы власть төҙөү юлы менән түгел, бәлки ауылдағы иҫке буржуаз ҡоролоштан яңы ҡоролошҡа аҡрынлап күсеү юлы менән яһалды. Ә быны эшләү — ул революция юғарынан яһалғанға күрә, переворот йәшәп килгән властең инициативаһы менән төп крәҫтиән массаларының ярҙамында яһалғанға күрә мөмкин булды» (шунда уҡ, 29-сы бит).

Совет государствоһы үҫешенең икенсе фазаһы шарттарында ил эсендә уның төп бурысы тыныс хужалыҡ-ойоштороу һәм культура-тәрбиә эшенән тора. Ошо бурысты хәл иткәндә, Совет государствоһы гигант эш йәйелдерә. СССР-ҙы индустрилаштырыу һәм ауыл хужалығын коллективлаштырыу, СССР-ҙы ҡеүәтле индустриаль-колхоз державаһына әйләндереү, ил алдынғы, социалистик культураһы булған илгә әйләндереү—былар ана шул эштәрҙең асыҡ кәүҙәләнеше булып тора. Шулай уҡ һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планының арттырып үтәлеүе, культура төҙөлөшөнөң барлыҡ өлкәләрендә — фән, искусство, әҙәбиәт өлкәһендә ғәйәт ҙур уңыштарға өлгәшеү быны асыҡ күрһәтәләр. ВКП(б) Үҙәк Комитетының идеология мәсьәләләре буйынса булған тарихи ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу нигеҙендә, кешеләр аңында һаҡланып килгән капитализм ҡалдыҡтарын бөтөрөү эше уңышлы бара. Волгала, Донда, Днепрҙа, Аму-Дарьяла, Украинаның ҡөньяғында, Ҡырымда һәм Төркмәнстанда коммунизмдың яңы төҙөлөштәре йәйелдерелеүе партияның һәм Совет государствоһының коммунистик общество экономикаһын ойоштороу бурысын ниндәй ҙур масштабтарҙа һәм темптарҙа хәл итеп килеүҙәрен бик асыҡ күрһәтәләр.

Коммунизм төҙөү һәм Совет государствоһының тыныслыҡ һаҡлау политикаһын бөтә саралар менән нығытып, халҡыбыҙ иптәш Сталиндең «Еңгән революция иле үҙ государствоһын, государство органдарын, разведка органдарын, армияһын йомшартмаҫҡа, бәлки бөтә саралар менән көсәйтергә тейеш, әгәр был ил капиталистик ҡамалыш тарафынан тар-мар ителергә теләмәһә, ул быларҙы эшләргә тейеш» тигән һүҙҙәрен һәр ваҡыт хәтерҙә тота.

Иптәш Сталиндең был күрһәтмәһе, капиталистик донъяның дошманлыҡ эше шарттарында беҙҙең илебеҙҙең үҫеш линияһы, беҙҙең күп милләтле Совет социалистик государствобыҙҙы бөтә саралар менән нығытыу линияһы булып тороуын тағы бер тапҡыр раҫлай.

Халыҡ демократияһы илдәрендә социализм нигеҙҙәрен ойоштороу тәжрибәһе общественың үҫешендә өҫҡорманың, яңы идеяларҙың һәм политик учреждениеларҙың ғәйәт ҙур роль уйнауы тураһында иптәш Сталиндең күрһәтмәләренең тәрән дәрәҫлеген ҡат-ҡат иҫбат итә.

* * *

Иптәш Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән хеҙмәте совет халҡын, коммунистар һәм эшселәр партияларын, бөтә донъялағы алдынғы кешеләрҙе тарихи материализмдың бик мөһим мәсьәләһен — базис һәм өҫҡорма тураһындағы мәсьәләне асыҡ аңлау менән ҡоралландыра. Ул алдынғы марксизм-ленинизм идеяларының бөйөк ойоштороусы, туплаусы һәм үҙгәртеп ҡороусы ролен, пролетариат партияһының һәм яңы социалистик государствоның капиталистик базисты һәм капиталистик өҫҡорманы бөтөрөүҙә, социализм һәм коммунизм төҙөүҙә булған ролен тәрәнерәк аңларға мөмкинлек бирә. Иптәш Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тигән хеҙмәте совет халҡына коммунизмдың еңеүе өсөн көрәштә яңы бөйөк ҡорал бирер.

В. Николаев.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 27 июнь. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 27 июнда былай, тип хәбәр итте:

Көнсығыш һәм үҙәк фронттың айырым участкаларында Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтары менән берлектә тығыҙ хәрәкәт итеп, урындағы әһәмиәттәге һуғыштарҙы алып барыуҙы дауам итәләр.

26 июнда Халыҡ армияһының үҙәк фронтта хәрәкәт итеүсе частәре, дошмандың контратакаһын кире ҡағып, дошманға уның йәнле көсөндә, дейем алғанда, бер полкҡа тиклем юғалтыу килтерҙеләр.

Көнсығыш фронтта лисынмансы тәскәрҙәрҙең ике батальоны юҡ итеҙе.

Халыҡ армияһының частәре һуғыш барышында түбәндәге трофейҙәрҙе; 1300-ҙән артығыраҡ винтовка, 300-ҙән артығыраҡ автомат, 27 еңел һәм 20 ауыр пулемет, һәр төрлө калибрҙағы 25 орудие ҡулға төшерҙеләр.

Берлиндең Америка секторы комендантына Берлиндәге Совет контроль комиссияһы вәкиленең хаты

БЕРЛИН, 27 июнь. (ТАСС). Июнь башында Көнбайыш Берлиндәге енәйәтсел элементтар совет танкистарына ҡаланың Америка секторындағы Потсдам шоссеһенә ҡуйылған һәйкәлде мәсхәрәләгәндәр. Был ваҡытта һәйкәлдең йөҙө емертелгән, постаментына ҡара буяу һөртөлгән, бензин һибеп яндырылған.

Был юл ҡуйғыһыҙ хәрәкәттәргә ҡаршы Берлиндәге Совет контроль комиссияһы вәкиле С. А. Деңьгиндең протесена Берлиндең Америка секторы коменданты генерал Мэтьюсон үҙ хатында, асылда, бындай провокацияларҙы яҡлау һәм дөрләндереү юлына баҫа.

«Һеҙҙең 1951 йылдың 18 июнендәге хатығыҙ, Берлиндең Америка секторындағы Потсдам шоссеһендәге совет танкистарына ҡуйылған һәйкәлгә ҡарата провокация Америка оккупацион властәренең рөхсәтенән башҡа эшләнмәгәндәр, тип уйлауымды нығыта.

Һеҙҙең хатығыҙҙағы «был һәйкәлдең артабан да Америка секторында булыуы немецтарҙың асыуын килтереү сығанағы булып хеҙмәт итәсәк һәм киләсәктә, бәлки, яңынан мәсхәрәләнер», тип раҫлау ул ғәйәт-үтә ялғанлыҡ булып тора, ул Көнбайыш Берлиндә һәр төрлө провокациялар менән шөғөлләнеүсе һәм шуның менән оккупацион властар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ҡатмарлаштырырға маташыусы фашистик элементтарҙе яҡлауға иҫәпләнгән.

Америка оккупацион властәренең бындай позицияһы Совет контроль органдарының ғәжәпләнеүен һәм асыуын тына тыуҙыра, шулай уҡ Берлин халҡының, шул иҫәптән Америка секторы халҡының да нәфрәтен тыуҙыра, уның ысын настроениеһе герман халҡын һәм Европаның башҡа халыҡтарын фашизм иҙеүенән азат итеү өсөн үҙ ғүмерҙәрен биргән герой совет кешеләренең иҫтәлегенә тәрән хөрмәт тойғоһо менән характерләнә».

Хатының аҙағында Деңьгин Америка оккупацион властәренең совет танкистарына ҡуйылған һәйкәлгә тейешле ихтирамды тәьмин итерлек саралар күреүҙе талап итә.

Англияның Иранға янауҙары

ЛОНДОН, 27 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының белдереүенән күренгәненсә, Англия властәре үҙҙәренең Иран адресына янауҙарын туҡтатмайҙар. Англияның 8 мең тонна ауырлығындағы «Моришиес» крейсеры Абадандан 40 милдәге Шат—эль—Араб йылғаһының тамағына ингән.

И. В. Сталин Әҫәрҙәренең икенсе томын Монголия халыҡ республикаһында баҫып сығарыу

УЛАН-БАТОР, 26 июнь. (ТАСС). Монголия халыҡ-революцион партияһының Үҙәк Комитеты И. В. Сталин Әҫәрҙәренең икенсе томын монгол теленә тәржемә итеп баҫып сығарҙы. Өсөнсө том да яҡын көндәрҙә баҫылып сығасаҡ.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһы исполкомының Я. А. Маликҡа хаты

НЬЮ-ЙОРК, 26 июнь. (ТАСС). СССР-ҙың БМО-лағы даими вәкиле, июнь айында Именселек Советының председателе булған Я. А. Малик ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһы исполкомының 1951 йылдың 21 июнендәге хатын Именселек Советының документы итеп баҫып сығарырға тәҡдим итеп, 25 июнда түбәндәге хатты БМО секретариатына ебәрҙе: «Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы секретариатына Именселек Советының председателе булараҡ, минең тарафтан алынған ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халыҡ-ара демократик федерацияһы исполкомының 1951 йылдың 21 июнендәге хатын Именселек Советының документы итеп баҫып сығарыуҙы һорайым».

СССР сит ил эштәре министренең урынбаҫары А. А. Громыконың Берлиндән китеүе

БЕРЛИН, 26 июнь. (ТАСС). Дүрт державаға сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендәге совет делегацияһы Советтар Союзы сит ил эштәре министренең урынбаҫары А. А. Громыко етәкселегендә 26 июнда иртән самолетта Мәскәүгә осто. Ул Парижҙан ҡайтҡанда Берлинда туҡталғайны.

Шенефельд аэродромында делегацияны Германия демократик республикаһының сит ил эштәре министры Георг Дертингер, Германия демократик республикаһы сит ил эштәре министренең урынбаҫары Антон Аккерман, Совет контроль комиссияһы председателенең беренсе урынбаҫары И. Ф. Семичастнов, СССР дипломатик миссияһының етәксеһе Г. М. Пушкин һәм башҡалар оҙатты.

Франция һалдаттары һуғышҡа әҙерләнеү политикаһына ҡаршы протест белдерәләр

ПАРИЖ, 26 июнь. (ТАСС). Хөкүмәттең яңы һуғышҡа әҙерләнеү политикаһына ҡаршы Франция һалдаттарының протест белдереүҙәре тураһындағы хәбәрҙәр әленән-әле йышыраҡ күренә башланылар.

«Юманите» газетаһы, дүртенсе колониаль пехота полкының һалдаттары араһында риза һыҙлыҡ хөкөм һөрә, тип хәбәр итә. Хәрби хеҙмәт срогын арттырыу тураһында Америка империалистәренең талаптары һалдаттарҙың протесен тыуҙыра. Күптән түгел был полк казармаларында Америка фильме күрһәтелде. Америка пропагандаһына ҡаршы протест билдәһе итеп бөтә һалдаттар ҙа залды ташлап сыҡтылар һәм фильмде күрһәтеүҙе туҡтатырға тура килде.

Тыныслыҡты яҡлауҙың Англия комитеты белдереүе

ЛОНДОН, 26 июнь. (ТАСС). Тыныслыҡты яҡлауҙың Англия комитеты 26 июнда белдереү иғлан итте. Унда Кореялағы һуғышты туҡтатыуға йүнәлтелгән Малик тәҡдимдәрен ҡотлай. Комитет шулай уҡ сит ил эштәре министры Моррисондың, «Англия хөкүмәте был потенциаль мөмкинлекте файҙаланыу юлдарын һәм средстволарын актив рәүештә өйрәнә лә инде», тип общиналар палатаһында яһаған белдереүендә ҡотлай.

Америка һалдаттары Кореяла һуғышырға теләмәйҙәр

НЬЮ-ЙОРК, 26 июнь. (ТАСС). «Нью-Йорк тайме» газетаһының хәбәрсеһе Баррет Кореянан, Корея мәсьәләһен тыныс юл менән хәл итеү һәм Кореяла һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатыу тураһында тәҡдим менән Я. А. Маликтең 23 июнда радио аша сығыш яһауы тураһындағы хәбәр фронттың бөтә линияһы буйынса һалдаттар араһында «тәбиғәттә булмаған тиҙлек менән таралды» һәм хатта, ғәҙәттә, мөһим яңылыҡтар тик бер нисә көн үткәс кенә барып еткән алдынғы посттарға ла билдәле булған, тип тапшыра. Баррет, һалдаттар Кореялағы һуғыштың туҡталыуына «ҙур өмөт» менән тулылар, тип күрһәтә.

Президент Трумэндең сығышы

НЬЮ-ЙОРК, 25 июнь. (ТАСС). 25 июнда президент Трумэн Таллахомда (Теннесси штаты) Америка Ҡушма Штаттары хөкүмәтенең политикаһына арналған телмәр менән сығыш яһаны.

Президент Трумэн үҙ телмәрендә Кореялағы хәрби конфликтҡа күренекле урын бирҙе. Кореялағы һуғыш тураһындағы мәсьәлә буйынса президент Трумэн бер ниндәй ҙә яңылыҡ әйтмәне. Ләкин ул Корея мәсьәләһен тыныс юл менән хәл итеү һәм һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатыу тураһында Берләшкән Милләттәр Ойошмаһындағы совет вәкиле Я. А. Малик тәҡдименә ҡушылырға мәжбүр булды.

„Джорнэл оф коммерс"тың асыҡтан-асыҡ белдереүе

НЬЮ-ЙОРК, 26 июнь. (ТАСС). АҠШ монополистик түркөмдәренең органы «Джорнал оф коммерс» газетаһы, Кореяға ҡарата АҠШ политикаһында Кореялағы вольфрам ятҡылыҡтары мөһим роль уйнайҙар. Америка промышленниктәре уларҙы эксплуатациялау менән бик ҡыҙыҡһыналар, тип асыҡтан-асыҡ белдерә. Газета, официаль вәкилдәр, 38-се параллель буйлап утты туҡтатыу мөмкинлеге тураһындағы мәсьәләне ҡарап, Кореялағы ҙур вольфрам рудниктәре тураһында уйланалар, тип яҙа. Хәҙерге ваҡытта был рудниктәр Америка линияһы артында торалар, ләкин улар 38-се параллелдән төньяҡтараҡ урынлашҡандар. АҠШ-тың төп маҡсаты был рудниктәрҙә вольфрам сығара башлауҙан тора, сөнки ул ике йәки өс дефицит материалдың береһен тәшкил итә һәм юғары сифатлы ҡорос етештереү өсөн кәрәкле булып тора.

Бынан да асығыраҡ әйтеү мөмкин түгел.

Совет бойҙайын Индияға илтеү

ДЕЛИ, 26 июнь. (ТАСС). «Фри пресс джорнал» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Польшаның 7.234 тонна совет бойҙайын тейәгән тағы ла бер сауҙа судноһы «Варта» Бомбейгә килгән.

ҠАЛА ҺӘМ РАЙОН ПРОКУРОРҘАРЫНЫҢ РЕСПУБЛИКА КӘҢӘШМӘҺЕ

20 — 25 июнда Өфөлә Башҡортостандың ҡала һәм район прокурорҙарының республика кәңәшмәһе булды.

Башҡорт АССР-ы прокуроры иптәш Гусев прокуратура органдарының эше һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында доклад менән сығыш яһаны.

Фекер алышыуҙарҙа сығып һөйләүселәр республика промышленность предприятиеларының ҡайһы берҙәрендә оборудованиеларҙы һаҡлауҙа булған серьез етешһеҙлектәргә туҡталдылар. Черниковск ҡалаһының фанера комбинатында производствола ваҡытлыса файҙаланылмаған станоктарҙы насар һаҡлайҙар. Оборудованиеларҙы һаҡлай торған складтарҙың иҙән һәм түшәмдәре юҡ. Складтарға үткән ямғыр һәм башҡа һыуҙарҙан оборудованиелар боҙолалар, тутығалар һәм эксплуатациялана башламаҫтан алда уҡ, сафтан сығыу хәленә еткәләр. Комбинаттың директоры Майоров һәм баш инженеры Пелепелин иптәштәр государство милктәрен һаҡлау буйынса үҙҙәренә йөкмәтелгән бурыстарҙы үтәмәйҙәр. Шуның һөҙөмтәһендә ағымдағы йылдың тик беренсе кварталында ғына уңарлаған оборудованиене бөрөмөгә эшкә ярарлыҡ хәлгә килгән.

Черниковск ҡала прокуроры иптәш Сорочкин был өлкәлә йомшаҡлыҡ күрһәтә. Государство милкенең һаҡлығын тәьмин итеүҙә яуаплы кешеләрҙең бындай енәйәтсел хәрәкәттәрен тикшереп, сара күрмәй.

Прокуратура органдарының ҡайһы бер работниктәре бюрократизмға һәм волокитасылыҡҡа ҡаршы көрәш ойоштормау ғына түгел, хатта үҙ адрестәренә ингән жалобаларҙы хәл итеүҙә үҙҙәре уҡ бюрократлыҡ күрһәтәләр.

Дүртөйлө район прокуроры Нагаев, халыҡ следователе Рамазанов иптәштәр Хаҡов, Нәбиев һәм Огрудниковтарҙың жалобаларын бер йылдан артыҡ ҡарамайынса йөрөтәләр. Жалоба биреүселәр РСФСР һәм Башҡорт АССР-ы прокуроры аша ғына жалобаларын тикшертеп, кәрәкле һөҙөмтә алдылар.

Краснокама район прокуроры Ҡорбанов һәм Мишкә районы прокуроры Шамыкаев иптәштәр ҙә хеҙмәтсәндәрҙән килгән жалобаларҙы ҡарауҙа волокита һәм бюрократизмға юл ҡуялар.

Шулай уҡ кәңәшмәлә сығып һөйләүсе иптәштәр ҡайһы бер район халыҡ судтарының сиктән тыш насар эшләүҙәрен, ә уларҙың эшенә Башҡорт АССР-ы Юстиция министерствоһы етәкселәренең йомшаҡ контроллек итеүҙәрен билдәләнеләр. Ҡайһы бер халыҡ судьяларының закондарҙы үҙҙәре уҡ аңлап еткермәүҙәре асылды. Ошо йылдың 16 июнендә Шаран районы 1-се участка халыҡ судының судьяһы иптәш Третьякова, прогул яһауы Сәнтова Юзелбикә Сәнт ҡыҙының эшен ҡарай һәм уны суд алты ай мәжбүри эшкә хөкөм итә, ләкин Сәнтованың үҙен шунда уҡ ҡулға алдылар. Нуриман районы 1-се участка халыҡ судында ла бығаоҡшашлы факттарҙы күрергә була.

Кәңәшмә бындай етешһеҙлектәрҙең бөтөрөлөүен һәм ғәйепле кешеләргә ҡырҡа сара күреүҙе талап итте. Унда ҡатнашыусылар ҙур күтәренкелек менән юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ бөйөк Сталинға ҡотлау хаты ҡабул иттеләр.

Кәңәшмәнән һуң район һәм ҡала прокурорҙарының 3 көнлөк семинары үткәрелде. Семинарҙа «Совет прокурорының мораль йөҙө тураһында», «Суд тәҙәләшә» һәм башҡа шундай темаларға лекциялар уҡылды.

Х. Йосопов.

ЙӘШТӘР КИСӘҺЕ

Ҡырмыҫҡалы районы Ленин исемендәге колхоз комсомол ойошмаһы яҙыусы Н. Бирюковтың «Чайка» тигән китабын уҡыуға арналған йәштәр кисәге уҙғарҙы. Йәштәр комсомол ойошмаһынан бындай кисәләрҙе йышыраҡ үткәреүҙе һоранылар.

Н. Фәтхуллина.

Беҙ күңелле һәм яҡшы тормошта йәшәйбеҙ

Мин етәкселек иткән промышленность артеле республикабыҙҙың иң алыҫ мөйөшөндә. Ул урман, тауҙар араһында, Ағиҙел йылғаһы башланған урында ултыра. Шуға ҡарамаҫтан, бында артель коллективының ижади тормошо ҡайнай.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды үтәү өсөн көрәш осоронда беҙҙең артелдең йөҙө танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Беҙ хәҙер районның эреләтелгән колхоздары өсөн урындағы промышленностең йөҙгә яҡын төрлө тауарҙарын етештерәбеҙ. Эреләтелгән колхоздар ҙур төҙөлөш эштәре алып баралар. Төҙөлөш өсөн кәрәк булған таҡта һәм башҡа төҙөү материалдарҙы етештереү планы артель коллективы тарафынан йыл һайын арттырып үтәлә.

Артель производство һәм финанс планын да шулай уҡ арттырып үтәй. Уның экономикаһы үҫә, коллективтың тормошо яҡшыра, хеҙмәт киңерәк механизациялаштырыла бара. Бында хәҙер электр, радио ла, клуб та бар. Беҙ, артель члендәре, күңелле һәм культуралы тормошта йәшәйбеҙ. Тыныслыҡ өсөн алып барылған ижади көрәш йылдан-йыл беҙҙе хеҙмәт подвигтарына рухландыра. Беҙ тыныслыҡ вахтаһында эшләп, июнь айы планын арттырып үтәү өсөн ныҡышмалы көрәш алып барабыҙ.

Беҙҙең ижади хеҙмәтебеҙ, бөтә һөйләшебеҙ һәм көсөбөҙ бынан ун йыл элек башланған дәһшәтле һуғышты ҡабатлатмауға һәм бөтә донъяла оҙаҡҡа һуҙылған, ныҡлы тыныслыҡ урынлаштырыуға йүнәлдерелгән.

Ғ. Ғәйнуллин,
Учалы районы «Восход» промышленность артеленең председателе.

Уҡыусыларҙың йәйге ялы күңелле үтә

Өфө ҡалаһының Кооперативная полянаһындағы 34-се һәм 65-се номерле ете йыллыҡ мәктәп уҡыусылары быйыл яҡшы ял итәләр. 65-се мәктәп бинаһында улар өсөн ял бүлмәһе ойошторолған. Бында шахмат, шашка, домино һәм башҡа төрлө уйындар бар. Мәктәп ергәһендә һәр пионер группаһының үҙе ултыртҡан ағас ҡыуаҡтары, сәскәләре һәм башҡа төр үҫемлектәре бар. Уларҙы тәрбиәләү менән бергә, балалар ағастарҙың нисек үҫеүҙәре менән дә танышалар, тәжрибә алалар.

Күптән түгел генә уларҙың күбеһе Ҡыҙыл Ярҙа булып ҡайтты. Улар унда Чапаев музейендә һәм малсылыҡ тәжрибә станцияһында булдылар. Шулай уҡ унда барғанда һәм ҡайтҡанда улар Черниковск ҡалаһында туҡталып, шырпы фабрикаһы, фанера комбинатының һәм башҡа күп кенә предприятиеларҙың эше менән таныштылар.

Был мәктәп балалары тағы ла бик күп, ҡыҙыҡлы походтарҙа, экскурсияларҙа буласаҡтар. Улар тиҙ көндән ебәкселек станцияһында, ботаника баҡсаһына барасаҡтар. 2-се һәм 5-се номерле совхоздарға барып, ауыл хужалығы эше, машиналары менән танышасаҡтар.

Дим һәм Ағиҙел буйлап көмәлә 3 көнлөк походта буласаҡтар. Был поход һәм экскурсияларҙа йыйылған коллекциялар, практик танышыуҙар, күҙәтеүҙәр уҡыусыларҙың мәктәптә алған белемдәрен ныҡ үҙләштерергә ҙур ярҙам итәсәк.

И. Чанышев.

Бокс

Ҡала беренселеге өсөн

Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының Луначарский исемендәге баҡсаһында йәштәр араһында личный беренселек өсөн бокс ярышы булып үтте. Ярыш өс көн дауам итте.

Бында Өфөнөң «Спартак», «Динамо», «Красная звезда», «Хеҙмәт резервтәре», «Наука» һәм «Спортшкола» ирекле обществоларының боксерҙары ҡатнашты.

Өсөнсө ауырлыҡтағы боксерҙар араһында Столяров, икенсе ауырлыҡтағы боксерҙар араһында Абдуллин иптәштәр еңеүсе булып сыҡтылар.

Иң еңел ауырлыҡтағы боксерҙар араһында Р. Угяшев (1-се разряд) һәм М. Преображенский (2-се разряд) иптәштәрҙең осрашыуы айырыуса ҡыҙыҡлы булды. Р. Угяшев үҙенең еңәсәгенә ышанып, беренсе раундты көс һалмай ғына башланы, ләкин йәш спортсмен Преображенский оҫта һәм йылғыр атакала еңеүгә уны еңде.

Ярыштың аҙаҡҡы көнөндә М. Преображенский Р. Ғилманов (1-се разряд) менән осрашты, ләкин Ғилмановтың көслө атакаһына сыҙамай, ул еңелергә мәжбүр булды.

Еңел ауырлыҡтағы боксерҙар араһында В. Гостев (1-се разряд) һәм Ғәбдуллин (2-се разряд) иптәштәр осрашып юғары техникаға эйә булғанлыҡтарын күрһәттеләр.

Был ярышта еңеп сығыусылар яҡын көндәрҙә РСФСР беренселеге өсөн буласаҡ ярышта ҡатнашасаҡтар. Хәҙер улар Р. Ғәбдрәхимов етәкселегендә («Спартак» командаһының тренеры) регуляр тренировка үтәләр.

РСФСР беренселеге өсөн бокс ярышы Молотов ҡалаһында үткәреләсәк.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Республикабыҙҙың башҡалаһы — Өфөнө тәҙәкләндереүҙә ҡатнашыуҙы телефон аппараттары заводының һәр бер эшсеһе үҙенең почетлы бурысы итеп һанай. Завод коллективы, ҡаланы тәҙәкләндереү буйынса ошо көндәрҙә үткәрелгән воскресникта ҙур күтәренкелек менән эшләп, байтаҡ эш башҡарҙы. Воскресникта Сиразиева, Калганов, Иванов, Биҡбулатов, Мәжитова, Сатаев һәм башҡа иптәштәр айырыуса тырышлыҡ менән эшләнеләр.

Ә. Сәйфетдинов.

* * *

Ишембай. Урманбишҡаҙаҡ ауылында йәйге спартакиада булды. Хеҙмәтсәндәр көрәш, бер нисә ботло гер күтәреү, ат сабыштырыу, йүгереү һәм башҡа төр номерҙәрҙе айырыуса яратып ҡаранылар.

Гер күтәреүселәр ярышында иптәш Ҡ. Ғәлиев беренсе урынды алды. Бер километрға йүгереүҙә С. Иманғолов финишка алдан килде.

В. Даутов.

* * *

Мишкә районы Ворошилов исемендәге колхозда мал аҙығы етештереү буйынса йыш ҡына воскресник ойошторола. Колхозда инде 209 гектар болондоң үләне сабылды һәм 100 гектарының бесәне эҫкертләнде.

Ғ. Зарипов.

* * *

Бишбүләк районы Маленков исемендәге колхозда болонда 20 бесән сапҡыс эшләй. Хәҙер 450 гектар болондоң үләне сабылды, 400 гектарының бесәне эҫкертләнде.

Жданов исемендәге колхозда бесән сапҡыстар Бишбүләк МТС-ының тракторы менән йөрөтөлә.

А. Петров.

Учалы. Ғайрамғол совхозында 1382 гектар болондағы үлән сабылды, 2300 центнер бесән әҙерләнде.

Б. Нечетков.

* * *

Наҙанғол орлоҡсолоҡ совхозында урожай йыйнауға әҙерлек киң йәйелдерелде. Хәҙер 8 комбайн ремонтланды, ашлыҡ ырҙын төҙөлә. Ырҙында ашлыҡ таҙартҡыс машиналар электр көсөндә эшләйәсәк. Яңы орлоҡ киптергес төҙөлә. Ул тәүлегенә 100 тоннанан артығыраҡ орлоҡ киптерә аласаҡ.

Ғ. Идрисов.

* * *

Воскресен. «Алға» колхозында урожай йыйнауға әҙерлек яҡшы алып барыла. 5 урғыс ремонтланды, Гоголев системаһындағы иген киптергес төҙөлә.

Бесән сабыу эше айырыуса яҡшы ойошторолған. Инде 250 гектар майҙандан үлән сабылып, 500 центнер бесән эҫкертләнде.

Колхозда төҙөлөш эше лә яҡшы бара. Правление бинаһы һалынды, бөтә фермаларҙа ремонт үткәрелде.

Ғ. Мәхмүтов.

* * *

Талбазы. Ауырғазы районы Берия исемендәге колхозда төҙөлөш эштәре киң ҡолас алды. Иптәш Батыршин етәкселегендәге төҙөү бригадаһы Гоголев системалы иген киптергес, тирмән бинаһы, колхоз физкультурниктары өсөн стадион һәм 40 баш ат өсөн торлаҡ төҙөнө. Хәҙер ҡоштар торлағы төҙөлә.

«Берлек», Салауат һәм Мичурин исемендәге колхоздарҙа ла төҙөү эштәре яҡшы бара.

Ф. Богданов.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Картоф үҫтереүҙең агротехникаһы

Республикабыҙҙың колхоздарында быйыл картоф ултыртыу эштәре яҡшы сифатлы итеп үткәрелде. Хәҙер картофтан юғары урожай үҫтереп алыуҙы тәьмин итеү өсөн сәсеүлектәрҙе ентекле тәрбиәләү бурысы алға килеп баҫты.

Сәсеүлектәрҙә тупраҡты йомшаҡ хәлдә тотоу һәм ҡый үләндәренән утау юғары урожай алыуҙа хәл иткес бурыс булып тора. Тупраҡты эшкәртеүҙе мөмкин тиклем механик көстәр ярҙамында башҡарырға, бының өсөн МТС-тарҙағы лущильниктәрҙе һәм культиваторҙарҙы киң ҡулланырға кәрәк.

Юғары урожай мастерҙары картоф участкаларында тупраҡты кәмендә өс тапҡыр йомшарталар. Тәүҙә рәт эсендәге тупраҡ мотыга һәм көрәктәр менән йомшартыла һәм һуңынан трактор йәки ат менән йөрөтөлгән культиваторҙар ярҙамында рәт араларында йомшартыу үткәрелә. Тупраҡ һәм һауа ҡоро осорҙа тупраҡты һай ғына итеп эшкәртергә кәрәк. Ямғырлы һауа шарттарында тәрән эшкәртелә.

Башҡортостан ауыл хужалығы институтының тәжрибә участкаһында үткәрелгән һынауҙар түбәндәгеләрҙе билдәләй: «эпикур» сортлы картоф сәсеүлегендә тупраҡты бөтөнләй йомшартмағанда һәр гектарҙан 62,4-әр центнер, бер тапҡыр йомшартҡанда 91,3-әр; ике тапҡыр йомшартҡанда 112,6-шар, ә өс тапҡыр йомшартҡанда 124,8-әр центнер урожай биргән. Тимәк, картоф участкаларында тупраҡты өс тапҡыр йомшартыу урожайҙы ике тапҡырға артыҡ бирә.

Картофты күмеү һауа торошона ҡарап эшләнә. Ҡоро һауала күмеү бөтөнләй ҡулланылмай. Һауа уртаса ҡыҙыулыҡта торһа һәм ямғырҙар ҙа ҡабатланһа, бер-ике тапҡыр күмеү үткәрелә. Уның тәүгеһе үҫемлек 18—20 сантиметр оҙонлоҡҡа еткәс, ә икенсеһе тәүгеһенән 15—18 көндән һуң башҡарыла. Был сроктарҙы һуңлатыу кәрәкле һөҙөмтәләрҙе бирмәй. Ямғырлы шарттарҙа үткәрелгән бындай сара урожайҙы 16 — 21 центнерға күтәрә.

Картофты өҫтәмә аҙыҡландырыу урожайҙы тағы ла күтәрә. Бөрө районы Тельман исемендәге колхозда иптәш Исаев көҙҙән һәр гектарға 40 тонна тиреҫ индергән һәм яҙ картофты ултыртыу процесында һәр ояға янынан өҫтәп ашлама биргән. Шулай уҡ сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү осоронда тағы ла ике тапҡыр өҫтәмә ашлама индергән. Һөҙөмтәлә картоф урожайы 20 процентҡа күтәрелгән. Былтыр иптәш Исаев 3 гектар картофтың һәр гектарынан 368-әр центнер урожай үҫтереп алыуға өлгәште.

Бында өҫтәмә ашламаларҙы дөрөҫ индерә белеү талап ителә. Уны шартына еткереп башҡарғанда ғына өҫтәмә урожай алырға мөмкин. Ҡоро тупраҡҡа һәм эҫе һауалы көндәрҙә индерелгән ашламалар, файҙа урынына, зарар ғына килтерәләр. Бында шулай уҡ ашламаларҙы мөмкин тиклем тәрәнерәк күмдереүҙе тәьмин итергә кәрәк. Юғиһә, күмдерелмәгән ашламаларҙың файҙаһы булмай. Өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы ямғырҙар һуңынан индереү яҡшы була. Һәр хәлдә уны дымлы тупраҡҡа индерергә кәрәк.

Картофҡа ниндәй ашламалар һәм күпме норма менән индерергә? Был һорауға яуап бирер өсөн, иң әүәл картоф үҫемлегенең биологик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға кәрәк. Үҫемлек һабаҡтары ерҙән ҡалҡып сыҡҡас та, көслө үҫһен өсөн улар күберәк азот ашламаһы алалар. Шуға күрә беренсе тапҡыр уға көкөрт әселе аммоний, аммиак селитраһы, тиреҫ шыйыҡсаһы, йәки ҡош тиҙәге кеүек ашламалар бирелә. Картофтың үҫемлектәре сәскәгә бөрөләнә башлағас, киреһенсә, азот ашламаһы бирмәҫкә, ә бәлки хлорлы калий, йәки көл, йәки тиреҫ шыйыҡсаһы кеүек, калий ашламалар бирелә.

Ашлама индергәндә шулай уҡ былтыр был участка тупрағында ниндәй культура булыуын, унда ниндәй ашламалар һәм ниндәй норма менән индерелеүен һәм быйыл картоф үҫемлегенең нисек үҫеүҙәрен иҫәпкә алырға кәрәк. Шуға күрә ашламалар индереүҙең нормалары күп төрлө була. Бөтә Союз картоф хужалығы институты һәр гектарға уртаса түбәндәге нормаларҙы ҡулланырға кәңәш бирә: аммиак селитраһы 75 — 100 килограмм йәки тиреҫ шыйыҡсаһы 8 — 10 тонна, йәки ҡош тиҙәге 3 — 5 центнер. Икенсе тапҡыр өҫтәмә ашлама индергәндә: хлорлы калий һәр гектарға 50 — 100 килограмм, йәки тиреҫ шыйыҡсаһы 8 — 10 тонна, йәки көл 3-4 центнер була.

Әгәр ҙә картофтың һабаҡтары әкрен үҫһәләр, япраҡтары ла һарғылт төҫтә булһалар, тупраҡҡа азотлы ашламалар индерелә. Әгәр үҫемлек һабаҡтары көслө һәм оҙон үҫеп киткәндә, фосфор һәм калий ашламалары бирергә кәрәк.

Быйыл ямғырҙар күп булды, тупраҡты эшкәртеү ҙә яҡшырҙы. Был шарттарҙа өҫтәмә аҙыҡландырыу картоф урожайын күтәреүгә алып барасаҡ.

Агроном А. Әхмәров.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Рус драма театрында — Луначарский исемендәге баҡсала—«Анна Каренина». Кис 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«ОКТЯБРҘӘ» — «Ҡорос һалдат».

«САЛАУАТТА» — иртән «Райком секретары», кис «Себер ере тураһында хикәйә».

«УРАЛДА» — «Ҡорос һалдат».

Государствоның күсмә зверинецы

А. Матросов исемендәге паркта һуңғы ике көндә генә эшләй.

Ул 1 июлдә ябыла.

Һирәк күренеш: Өфө ҡалаһында тыуған арыҫлан балалары күрһәтелә, әсәләре—инә арыҫлан «Люся», аталары Африка арыҫланы—«Вагай».

Шулай уҡ башҡа күп кенә йәнлектәр һәм ҡоштар күрһәтелә.

Павлиондар киске 7 сәғәттә асыла.

Зверинец көн һайын иртәнге 9 сәғәттән төнгө 12 сәғәтҡа тиклем эшләй.

Зверинецҡа билет алыусылар паркҡа инеү өсөн аҡ түләмәйҙәр.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01988

Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы.

Тиражы 25000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№127(8844) 1951 йыл 30 ИЮНЬ шәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

З. Ишбулатов. — Иптәш Сталиндең тел ғилеме тураһындағы учениеһе нигеҙендә (1-се бит).
«Правда» редакцияһының Моррисон әфәндегә яуабы (1-се бит).
БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЕНДӘ. Республика колхоздарында 1951 йылда ҡымыҙ етештереү (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Б. Сафиканов. — Колхоз партия ойошмаһы — юғары урожай өсөн көрәштә ойоштороусы (2-се бит).
Н. Федоров һәм К. Еникеев. — Производство отходтарын файҙаланыу — экономия өсөн көрәштә мөһим сара (2-се бит).
Сит Ил Эштәре Министрҙары Урынбаҫарҙарының Кәңәшмәһендә (2-се бит).
КОММУНИЗМДЫҢ БӨЙӨК ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ. М. Хәйҙәров. — Тыныслыҡ фронты тағы ла ныҡыраҡ өсөн (2-се бит).
ЙӘШ НЕФТСЕЛӘРҘЕҢ IV СТАХАНОВСЫ СЛЕТЫ. БӨЙӨК СТАЛИНГА БИРГӘН ВӘҒӘҘӘНЕ НАМЫҪ МЕНӘН ҮТӘҮ ӨСӨН (3-сө бит).
ОКТЯБРЬСКИЙҘАН ХАТТАР Ә. Бикчәнтәев. — 5. Дан (4-се бит).
В. Ғирфанов. — Алдынғы колхоздарға һәм тәжрибә баҫыуҙарына экскурсиялар (4-се бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР. (4-се бит).

Алдынғы тәжрибәне пропагандалау — партия ойошмаларының мөһим эше

Коммунизмдең бөйөк бинаһын төҙөүсе совет кешеләренең тыныс ижади хеҙмәте һоҡланғыс подвигтар менән тулы. Бөйөк маҡсат — бөйөк энергия тыуҙыра, яңынан-яңы хеҙмәт батырҙарын барлыҡҡа килтерә.

Государство пландарын срогынан алда арттырып үтәү, Тыуған илебеҙгә күберәк һәм яҡшы сифатлы продукция етештереү, мул урожай үҫтереү, малдарҙың төҡомон яҡшыртыу һәм продукт биреүсәнлеген күтәреү өсөн йәйелдерелгән социалистик ярыш яңынан-яңы ҡаҙаныштарға, хеҙмәт етештереүсәнлегенең бығаса булмаған күрһәткестәренә киң юл аса. Социалистик ярыш — промышленносте, ауыл хужалығын үҫтереүҙең ҡеүәтле этәргес көсө ул. «Ярышта иң күренекле нәмә шунда тора, — тип өйрәтә иптәш Сталин, — ул кешеләрҙең хеҙмәткә ҡараштарында тамырынан алып переворот яһай, сөнки ул элек хурлыҡлы һәм ауыр йөк тип йөрөтөлгән хеҙмәтте **намыҫ** эшенә, **дан** эшенә, **батырлыҡ** һәм **геройлыҡ** эшенә әйләндерә. Капиталистик илдәрҙә быға оҡшашлы бер ни ҙә юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел».

Социалистик ярыш барышында мәшһүрләнгән производство новаторҙары, үҙ эштәренең ысын мастерҙары барлыҡҡа килә. Улар — Тыуған илебеҙҙең ялҡынлы патриоттары, уның ҡеүәтен һәм бөйөклөгөн күтәреү өсөн фиҙакәр көрәшселәр. Улар ныҡышмалылыҡ менән хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, яңынан-яңы уңыштарға өлгәшеү юлдарын эҙләйҙәр, эштә һоҡланғыс инициатива күрһәтәләр. Уларҙың тәжрибәһе — халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарын артабан үҫтереү өсөн баһалап бөтөргөһеҙ ҡиммәтле вклад ул. Ал- [illegible]

Был резервте тулыһынса файҙаланыу яңынан-яңы ҡаҙаныштарға өлгәшеүгә мөмкинлек бирә. Ләкин мөмкинлек, иптәш Сталин өйрәткәнсә, ысынбарлыҡ түгел әле. Тап бына ошо ҡеүәтле резервте файҙаланыуҙа беҙҙә сериәз етешһеҙлектәр бар. Партияның айырым ҡала һәм район комитеттәре был мөһим эшкә тейешле иғтибар биреп еткермәйҙәр. Алдынғы тәжрибәне пропагандалау өсөн булған мөмкинлектәр файҙаланылмай. Алдынғы тәжрибәне пропагандалауҙа культура-ағартыу учреждениеларына, политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының Башҡортостан бүлексәһенә һәм уның район бүлексәләренә ҙур бурыстар йөкмәтелә. Ләкин улар был бурысты ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәйҙәр. Алдынғыларҙың эш методтары тураһында лекциялар үткәрмәйҙәр, производство новаторҙарының сығыштарын ойоштормайҙар. Обществоның Баймаҡ районындағы бүлексәһе алдынғыларҙың эш тәжрибәһе тураһында лекциялар үткәреүҙе, производство новаторҙарының сығыштарын ойоштороуҙы хатта планлаштырмаған да, ВКП(б)-ның район комитеты бүлексәнең эше менән ҡыҙыҡһынмай, уға йүнәлеш бирмәй. Матрай, Әбйәлил, Нуриман райондарында, Белорет ҡалаһында ла ошондай уҡ хәл.

Алдынғыларҙың тәжрибәһен пропагандалауҙа Башгосиздаттың роле ҙур. Ләкин был темаға китаптар баҫып сығарыуҙы ул йылдан-йылға әҙәп килә. Оригиналь әйберҙәр бөтөнләй, тиерлек бирелмәй. Сөнки специалистарҙан авторҙар активе туплау буйынса етерлек тиклем эш алып барылмай. Ә айырым авторҙарҙың бер үк брошюраларын бер аҙ үҙгәртеп йыл һайын баҫтырып сығарыуҙарына ул килешеп йәшәй. Ә инде промышленность алдынғыларының тәжрибәһенә арналған китаптарҙың бик аҙ булыуы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Сөнки уның менән шөғөлләнеүсе, уның өсөн яуаплы кеше үҙе уҡ юҡ. Хатта республикабыҙҙың ғорурлығын тәшкил иткән Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының тәжрибәһе тураһында ла китаптарҙың баҫылмауын Башгосиздат етәкселәренең мөһим эшкә яуапһыҙ ҡарауҙары менән генә аңлатырға мөмкин.

[illegible] ине.!

Алдынғы тәжрибәне пропагандалау — государство әһәмиәтендәге мөһим эш ул. Партия ойошмалары был тарафта планлы һәм системалы эш алып барырға тейештәр. Социалистик ярыш барышында барлыҡҡа килгән һәр бер яңылыҡты ентекләп күҙәтеп барырға, уны атайҙарса хәстәрлек менән үҫтерергә һәм башҡаларға күсерергә кәрәк. Был — яңы уңыштарға өлгәшеүҙең ышаныслы нигеҙе.

Партия ойошмаларының бурысы заводтарҙа һәм фабрикаларҙа, колхоз, совхоз һәм МТС-тарҙа алдынғы тәжрибәне киң пропагандалауҙан тора.

„Правда" редакцияһының Моррисон әфәндегә яуабы

Англияның сит ил эштәре министры Герберт Моррисон Пресс Ассошиэйшн агентствоһындағы иртәнге ашта сығыш яһап, Советтар Союзына ҡаршы нәүбәттәге дошманлығын күрһәтеү өсөн уны ярашлы һылтау итеп иҫәпләне. Аудиторияның составын иҫәпкә алып, оратор совет матбуғатына, бигерәк тә «Правда» газетаһына айырыуса иғтибар бирҙе, үҙенең бөтә ғәйепләүҙәрен уға ташланы.

Советтарға ҡаршы дошманлыҡ күрһәтеү өсөн Моррисон әфәнде файҙаланған юғарыла күрһәтелгән һылтау берҙән-бер һылтау булды, тип раҫлаһаҡ, беҙ ғәҙел булмаҫ инек. Тәжрибә шуны күрһәтә, лейбористик министрҙарҙың бер генә сығышы ла Советтар Союзы адресы буйынса уйҙырма һәм мәкерле ғәйепләүҙәрҙән башҡа яһалмай. Миҫал өсөн алыҫҡа китәһе юҡ: СССР-ға ҡаршы тупаҫ ғәйепләүҙәр менән тулы булған Моррисон әфәндеһенең сығыш яһауына тиклем өс көн алдын ғына Англияның сауҙа министры Шоукросс СССР-ға ҡаршы дошманлыҡ сығышын яһаны, ә Пресс Ассошиэйшн агентствоһындағы иртәнге аштан һуң ике көн үткәс, Моррисон әфәнде үҙе. Лидста горняктарҙың милли профсоюздары тарафынан ойошторолған төшкө ашта, Советтарға ҡаршы үҙенең дошманлыҡ сығыштарын ҡабатлауҙы мөмкин тип иҫәпләне.

Лейбористик лидерҙарҙың һәм министрҙарҙың Советтарға ҡаршы сығыштарының айырмалы үҙенсәлеге уларҙың буш һүҙҙәрҙән, нигеҙһеҙ тәҙәләүҙәрҙән тора. Әгәр ҙә беҙ Моррисон әфәндеһенең күптән түгел булған телмәренә туҡталабыҙ икән, быны ораторҙың Советтар Союзына, айырым алғанда, совет матбуғатына ташлаған ғәйепләүҙәрен һәм дәғүәләрен унда «нигеҙләргә» маташыуы өсөн эшләйбеҙ. Моррисон әфәндеһенең уңышһыҙлыҡҡа осрауы уның ғәйебе түгел инде, ә бәлаһе, сөнки ул шулай эшләргә маташты, ләкин унда асыҡтан-асыҡ ярамаһыҙ саралар ҡулланылды.

Ысынлап та, Моррисон, Шоукросс әфәнделәрҙең һәм башҡа лейбористик лидерҙарҙың телмәрҙәрен уҡып, Англия сит ил эштәре министрының совет матбуғатын уларҙың сығыштарын иғлан итмәүҙә ғәйепләп, совет халҡына тарата ниндәй «дуҫлыҡ» сығыштары тураһында һөйләүен аңлауы ҡыйын. Факттар нисек кенә нәмә тураһында һөйләйҙәр— Англия менән СССР халыҡтары араһында дуҫтарса хеҙмәттәшлеккә саҡырыусы телмәрҙәр һәм сығыштар һис һүҙһеҙ совет матбуғатында урынлаштырылалар. Уларҙы теләһә ниндәй уҡыусы һәр ваҡытта совет матбуғатынан таба ала.

Моррисон әфәндеһенең беренсе ғәйепләүе шулай итеп юҡҡа сыға.

Пәнаһе совет матбуғаты сит ил эштәре министрҙары урынбаҫарҙарының Париждағы Кәңәшмәһендә көнбайыш державаларҙың роле тураһында уҡыусыларға етерлек тиклем информация яһамаһы, тигән уның икенсе ғәйепләүе лә шулай уҡ нигеҙһеҙ. Атап әйткәндә, Моррисон әфәнде көнбайыш державаларҙың 31 майҙағы нотаһының бик ҡыҫҡа яҡтыртылыуы, шул уҡ ваҡытта совет яуабының тулыһынса иғлан ителеүе менән риза түгел.

Моррисон әфәнде Англия матбуғатын совет матбуғатына ҡапма-ҡаршы ҡуя. Уңышһыҙ сағыштырыу Моррисон әфәнде өсөн, уңышһыҙ. Башта шуны билдәләйек, мәҫәлән, СССР вәкиле А. Громыконың 10 майҙағы белдереүе кеүек ошондай мөһим сығышы Англияның йоғонтоло газетаһы «Таймс» та **бөтөнләйгә иғлан ителмәне.**

Әлбиттә, Моррисон әфәнде үҙенең «Таймс» газетаһының хужаһы булып тормауға һылтана алыр ине. Бәхәсләшмәйбеҙ. Ләкин лейбористик партияның үҙәк органы, Моррисон әфәнде уның лидерҙарының береһе булып торған «Дейли геральд» газетаһында эштең нисек тороуын ҡарайыҡ. Совет матбуғатында Париж кәңәшмәһе тураһында көн һайын һәм аныҡ отчет иғлан ителгән бер ваҡытта, «Дейли геральд» газетаһында Париж һөйләшеүҙәре тураһында хатта бәләкәй генә хәбәр ҙә күренмәгән көндәр генә түгел, ә аҙналар ҙа булды. Советтар Союзының позицияһы тураһында «Дейли геральд» газетаһының нисек информация яһауын түбәндәге факттан күрергә мөмкин. Көнбайыш державаларҙың 31 майҙағы нотаһына Совет Хөкүмәтенең яуабында Атлантик пакт һәм АҠШ-тың хәрби базаларына ҡарата совет тәҡдимен килешелмәгән пункт сифатында көн тәртибенә индереү тураһындағы мәсьәләне Париж кәңәшмәһе ыңғай мәғәнәлә хәл итмәһә лә сит ил эштәре министрҙары Советының Вашингтондағы кәңәшмәһенә Совет Хөкүмәтенең үҙ вәкилен киҫкеләштән ебәрергә әҙер тороуы һыҙыҡ өҫтөнә алынғайны. «Дейли геральд» бындай мөһим хәбәрҙе Англия уҡыусылары иғтибарына нисек еткерҙе һуң? Ниңәтә совет нотаһының тулы тексын баҫып сығарманы. Хәбәргә газета тарафынан бирелгән заголовкала: «Громыко көнбайыш державаларға яңынан «юҡ» тип белдерә», тип әйтелгәйне. Шул уҡ ваҡытта тексты факттарҙы боҙоп, «Дейли геральд», Советтар Союзы йәнәһе сит ил эштәре министрҙары Советын саҡырыуға ҡаршы килә, тип яҙҙы?!

Париж кәңәшмәһе тураһындағы информация менән эш ысынбарлыҡта шулай тора.

Моррисон әфәнде телмәрендә, юғарыла күрһәтелгәненсә, ғәйепләүҙәр генә түгел, бәлки ҡайһы бер дәғүәләр ҙә булды. Улар Англия сит ил эштәре министрының, ихтимал, Америкаса уйлау әҫәһенә үҙенең һәүәҫ булыуы арҡаһындалыр, инглиз милләтенә хас булған сама тойғоһон юғалтыуын күрһәтәләр. Моррисон әфәнде, Совет Хөкүмәтенең етәксеһе И. В. Сталин Англия матбуғатына интервью биргән ваҡытта, уны Англия матбуғаты беренсе биттә, иң күренекле урында ҙур заголовка аҫтында баҫып сығара, шул уҡ ваҡытта уның, Моррисондың, йәки премьер-министр Эттлиҙең сығыштарын совет матбуғаты теләмәйенсә генә иғлан итә, тип зарлана. Был айҡанлы Моррисон әфәндегә нимә әйтергә мөмкин һуң?

Факттар логикаһы—иң көслө логика, ә факттар ошондай. И. В. Сталин сығыштарын бөтә донъя иғтибар менән тыңлай, уларҙа халыҡтар киләсәккә яҡты өмөттәрҙе, халыҡтар араһында тыныслыҡ өсөн, дуҫлыҡ өсөн көрәшкә саҡырыу күрәләр. Сит ил, шул иҫәптән Англия матбуғаты, И. В. Сталин сығыштарын иғлан итмәйенсә ҡала алмай, сөнки уны уҡыусы талап итә. Ул был сығыштарҙың йөкмәткеһен белергә теләй. Шул уҡ ваҡытта Англия газеталарының хужалары, һис шикһеҙ, И. В. Сталин һүҙҙәре баҫылған Англия газеталары тиражының ҡырҡа күтәрелеүен һәм өҫтәмә доходтар биреүен иҫәпкә алалар. Ә совет матбуғатының тәжрибәһе Моррисон әфәндеһенең телмәрҙәре кеүек белдереүҙәрҙе совет газеталарында баҫып сығарыуҙың һәр ваҡытта тиражды аҙайтыуға һәм доходтарҙы кәметеүгә килтергәнлеген күрһәтә. Һәм был аңлайышлы ла: совет уҡыусыһы халыҡ-ара обстановкаға дөрөҫ һәм сериәз анализ биреү урынына, ғәҙел булмаған дошманлыҡ сығыштары менән тулған материалдарға кире мөнәсәбәт итә.

Моррисон әфәнде үҙенең телмәрендә «Правда»ның Англияның сит ил эштәре министрының махсус интервьюһе өсөн үҙ биттәрен биреүен теләүен әйтте. Шул уҡ ваҡытта ул беҙҙең газетабыҙҙа уның һүҙҙәренең тулыһынса һәм иң күренекле урында баҫылып сығыуын теләй. Ул үҙенең телмәрендә, «Правда» был тәҡдимгә нисек ҡарар? тигән һорау бирҙе.

Ярай, «Правда» Моррисон әфәнде сығыштары өсөн урын бирергә әҙер, улар, үҙенән-үҙе билдәле, бер-береңә ихтирамлыҡ күрһәтеү нигеҙендә, тулыһынса һәм аныҡ итеп иғлан ителәсәк. Әлбиттә, «Правда» тиражы бынан зыян күрәсәк, ләкин «Правда» был ҡорбанды яһарға әҙер.

«Правда» редакцияһы, Моррисон әфәндеһенең сығышына үҙ яуабының Англия матбуғатында ошолай уҡ аныҡ һәм ошолай уҡ күренекле урында баҫылып сығыуына ышанырға теләй.

Шулай итеп, был тәҡдимгә Моррисон әфәндеһенең фекере ниндәй?

(«ПРАВДА» газетаһының 28 июндәге номеренән).

Иптәш Сталиндең тел ғилеме тураһындағы учениеһе нигеҙендә

Өфөлә, СССР Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалының тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми учреждениеларҙың вәкилдәре ҡатнашлығында ғилми советтың киңәйтелгән ултырышы булып үтте.

Ултырышта бөйөк Сталиндең марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре тураһындағы хеҙмәте нигеҙендә, институттың эшен ҡайтанан ҡарау йомғаҡтары тураһында тарих фәндәре кандидаты иптәш А. Усманов доклад яһаны.

Иптәш Сталиндең «Марксизм һәм тел ғилеме мәсьәләләре» тураһындағы гениаль хеҙмәте башҡорт халҡы культураһының тел һәм әҙәбиәтенең артабан үҫешенә һәм уны алға ебәреүҙә яңы этап асты.

Башҡорт халҡының культураһын, уның тел һәм әҙәбиәтен марксистик нигеҙҙә байытыу эштәре ҙур аҙымдар менән алға бара.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт теле һәм уның әҙәбиәтен үҫтереүгә башҡорт теленең һүҙлек фондын байытыуға һәм башҡорт теленең грамматика төҙөлөшөн өйрәнеүгә ҙур әһәмиәт бирелде.

Һөҙөмтәлә «рус-башҡорт һүҙлеге», башланғыс һәм урта мәктәптәр өсөн һүҙлек баҫылып сыҡты. Математика, химия, ботаника, физика, география фәндәре буйынса терминологик һүҙлектәр төҙөлдө. Хәҙер институт «Башҡорт-рус һүҙлеген» төҙөү буйынса күп эш башҡара. Был һүҙлек өсөн 65 мең һүҙ йыйналды. Шуның менән бергә институт хеҙмәткәрҙәре башҡорт теленең айырым мәсьәләләре буйынса капиталь хеҙмәттәр һәм мәҡәләләр яҙалар. Мәҫәлән, СССР Фәндәр Академияһының член корреспонденты Н. К. Дмитриев «Башҡорт теле грамматикаһы», Ә. Харисов—«башҡорт телендә тыҙым категорияларының күренеше», К. Әхмәров — «Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре», Ә. Чанышев—«Сифат категориялары», К. З. Әхмәров һәм Р. Терегулова «Рус һәм башҡорт телдәренең сағыштырма грамматикаһы», Т. Баишев — «Башҡорт теленең диалекттары», Ж. Кейекбаев «Башҡорт теленең орфоэпияһы» тигән хеҙмәттәр яҙҙылар. Бынан башҡа мәктәп грамматикаһы һәм башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҡыу китаптары төҙөлдө.

Был эштәрҙе башҡарыу өсөн институт ғилми работниктарының идея һәм теоретик кимәлдәрен күтәреү буйынса семинарҙар үткәрҙе. Семинарҙарҙа түбәндәге темаларға докладтар һәм лекциялар уҡылған. Мәҫәлән, «Базис һәм өҫҡормә тураһында марксизм-ленинизм учениеһы», «Тел үҫешенең төп закондары тураһында иптәш Сталиндең учениеһы» һәм башҡалар. Семинарҙарҙа лекция һәм докладтар тыңлағандан һуң институттың ғилми работниктәре үҙҙәре Өфө һәм Черниковск ҡалалары уҡытыусылары һәм интеллигенция йыйылыштарында 39-ҙан артыҡ лекция уҡынылар.

Икенсе мәсьәлә буйынса «башҡорт теленең һүҙлек составын байытыуҙа рус теленең йоғонтоһо» тигән темаға филология фәндәре кандидаты Рауза Терегулова доклад менән сығыш яһаны.

Фекер алышыуҙарҙа тарих фәндәре кандидаты С. Васильев, ғилми хеҙмәткәр П. Ишериков иптәштәр ҡатнаштылар.

З. Ишбулатов.

Бөтә көстө мал аҙыҡтары әҙерләүгә тупланыҡ

Колхозсылар быйыл малдарға етерлек бесән әҙерләүҙе 15 июлгә тамамларға социалистик йөкләмә алдылар. Йөкләмәне үтәүҙә улар үҙ-ара ярышалар. Болондарҙа 12 бесән саппыс машинаһы һәм 180 ҡул салғыһы эшләй.

Колхозда 620 тонна силос һыйышлы сокорҙар әҙерләнде. Силос һалыуҙа 72 кешенән торған бригада эшләй. Уға тейешле инвентарҙар һәм тартыу көстәре бирелде. Силос һалыу планы 5 июлгә тамамланасаҡ.

Беҙ мал аҙығы әҙерләүгә бөтә көстө туплау менән бергә, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе һәм уны йыйнауға әҙерлекте онотмайбыҙ. Сәсеүлектәрҙе яҡшы тәрбиәләйбеҙ, урожай йыйнауға яҡшы әҙерләнәбеҙ.

Беҙ мал аҙыҡтары әҙерләүҙе урожай йыйнау осороно тиклем тулыһынса тамамлау өсөн көрәшәбеҙ.

Ғ. Ғәлиев,

Әлшәй районы Буляшин исемендәге колхоздың председателе.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында

Республика колхоздарында 1951 йылда ҡымыҙ етештереү

Ошо көндәрҙә Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы республикала ҡымыҙ етештереү тураһындағы мәсьәләне ҡараны.

Министрҙар Советы, республиканың күпселек колхоздарының ҡымыҙ етештереү эше менән күптән үк шөғөлләнеүҙәренә һәм айырым колхоздарҙың ҡымыҙ һатыуҙан йыл һайын аҡсалата ҙур доход алыуҙарына ҡарамаҫтан, был эш күпселек ваҡиғала планлы алып барылмай, осраҡлы характерҙа тора, һөт продукцияһы регуляр иҫәпкә алынмай, ҡымыҙ һатыуҙан килгән аҡса күпселек колхоздарҙа колхоз кассаһына индерелмәй, ҡымыҙҙы файҙаланыуҙа һәм ҡымыҙ һатыуҙан килгән аҡса средстволарын тотоноуҙа тәҙҙрыуҙарға юл ҡуйыла, тип билдәләне.

Ошоноң менән бергә, күпселек колхоздар ҡымыҙ етештереү артынан ҡыуып, ҡымыҙ өсөн һауыла торған бейәләрҙең ҡолондарын тәрбиәләүгә һәм үҫтереүгә тейешле иғтибар бирмәйҙәр, шуның менән ҡолондарҙың, бигерәк тә уларҙың имеү осоронда, нормаль үҫеүенә ҙур зыян килтерелә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы, республика колхоздары бейәләрҙе, шулай уҡ ҡолондарҙы тәрбиәләү һәм ашатыу буйынса, зооветеринар ҡағиҙәләрҙе ныҡ һаҡлап һауыуҙы ойошторғанда, халыҡ тарафынан дауалау маҡсатында ҡулланыла торған, ҡиммәтле ҡымыҙҙы ҙур күләмдәрҙә етештерә алырҙар, тип иҫәпләй.

Ҡымыҙ етештереүҙең киң мөмкинлектәрен уны һатыуҙан килгән юғары доходлылыҡты иҫәпкә алып һәм колхоздарҙың общественный хужалығын нығытыу маҡсатын күҙәтеп, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы райондарға һәм колхоз правлениеларына колхоздың үҙенә ҡымыҙ етештереү өсөн, шулай уҡ Аҙыҡ промышленносе министерствоһының район аҙыҡ комбинаттары һәм Башҡорт АССР-ы Сауҙа министерствоһының пищеторгтары менән договорҙар буйынса ҡымыҙ һатыу өсөн бейәләрҙе һауыуҙы ойошторорға тәҡдим итте һәм Аҙыҡ промышленносе министерствоһын (иптәш Ибраһимовты) Дәүләкән район аҙыҡ комбинатында 1951 йылдың июль һәм август айҙарында көн һайын 1000 литр күләмендә һәм Стәрлетамаҡ ҡала аҙыҡ комбинатында 600 литр ҡымыҙ етештерә торған ҡымыҙ производствоһы цехтары ойошторорға һәм етештерелгән ҡымыҙҙы үҙҙәренең Өфө, Черниковск һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларындағы сауҙа селтәрҙәре буйынса һатыуҙы башларға мәжбүр итте.

Бейә һөтө һатып алыу өсөн Дәүләкән район аҙыҡ комбинатына Дәүләкән, Шишмә, Әлшәй райондарының колхоздарын, Стәрлетамаҡ ҡала аҙыҡ комбинатына Стәрлетамаҡ һәм Маҡар райондарының колхоздарын беркетергә ҡарар ителде.

Башҡорт АССР-ы Сауҙа министерствоһына (иптәш Липатовҡа) Өфө пищеторгы эргәһендә 1951 йылдың июль һәм август айҙарында көн һайын 600 литр күләмендә ҡымыҙ етештереү һәм һатыуҙы ойошторорға тәҡдим ителде.

Бейә һөтө һатып алыу өсөн Өфө ҡала пищеторгына Бөҙәләк һәм Ҡырмыҫҡалы райондарының колхоздары беркетелде.

Аҙыҡ промышленносе министерствоһына (иптәш Ибраһимовҡа) һәм Сауҙа министерствоһына (иптәш Липатовҡа) колхоздарҙан бейә һөтө һатып алыу буйынса договорҙар төҙөүҙе ошо йылдың 1 июленән дә һуңға ҡалдырмай тамамларға ҡушылды.

Министрҙар Советы Дәүләкән, Әлшәй, Шишмә, Бөҙәләк, Ҡырмыҫҡалы, Стәрлетамаҡ һәм Маҡар район Советтары исполкомдарына Башҡорт АССР-ы Аҙыҡ промышленносе министерствоһы һәм Сауҙа министерствоһы предприятиеларына бейә һөтө һатыу буйынса договорҙар төҙөүгә колхоздарҙы һайлап алыуҙы һәм был эштә практик ярҙам күрһәтеүҙе тәьмин итергә йөкмәтте.

Был райондарҙың район Советтары исполкомдары председателдәренә колхоздар тарафынан етештерелгән ҡымыҙҙы ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә һәм эшсе посёлкаларында һатыуҙы ойошторорға тәҡдим ителде.

Ауыл хужалығы министерствоһына (иптәш Еникеевкә) бейәләрҙе һауыу, ҡолондарҙы тәрбиәләп үҫтереү буйынса, колхоздарҙа ҡымыҙ әҙерләү техникаһы буйынса 10 көн эсендә инструкция эшләп сығарырға һәм уны райондарға еткерергә тәҡдим ителде.

Район ауыл хужалығы бүлектәренең йылҡысылыҡ буйынса зоотехниктарына, шулай уҡ государство инспекторҙарына бейәләрҙе һауыу буйынса инструкцияны боҙоуҙар булһа, колхоз правлениеларына бейәләрҙе һауыуҙы һәм ҡымыҙ етештереүҙе тыйыу тураһында хоҡуҡ бирелде.

Министрҙар Советы шулай уҡ:

Район Советтары исполкомдары председателдәрен, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәрен һәм күрһәтелгән райондарҙағы колхоздарҙың председателдәрен һауылған һәр бер бейәнең һөтөн иҫәпкә алып барыу буйынса журналдар булдырырға, һөт алыуҙы һәм ҡымыҙ һатыуҙы, шулай уҡ ҡымыҙ һатыуҙан килгән аҡсаны ныҡлы иҫәптә тоторға мәжбүр итте;

Башҡорт АССР-ы Һаулыҡ һаҡлау министерствоһын (иптәш Сиразетдинованы) 1951 йылдың июль һәм август айҙарында Йомаҡай санаторийының ярҙамсы хужалығынан 4500 литр ҡымыҙҙы Башҡорт АССР-ы Сауҙа министерствоһына тапшырырға мәжбүр итте;

Ауыл хужалығы министерствоһына, Аҙыҡ промышленносе министерствоһына һәм Сауҙа министерствоһына 1951 йылдың 1 октябренә Министрҙар Советы ҡарарында билдәләнгән сараларҙың үтәлеше тураһында Башҡорт АСС-ы Министрҙар Советына отчет бирергә тәҡдим ителде.

Һауа Флоты Көнөн байрам итеү тураһында

Һауа Флоты Көнөн байрам итеү йәкшәмбе көн, 1951 йылдың 1 июленә, иртәнге 11 сәғәттә Тушино аэродромында үткәреләсәк. (ТАСС).

Һауа Флоты Көнө хөрмәтенә

1 июлдә илебеҙҙең бөтә хеҙмәтсәндәре СССР Һауа Флоты Көнөн байрам итәсәктәр.

Авиация флотына булышлыҡ итеү буйынса ирекле обществоның (Досав) Башҡортостан Өлкә Комитеты был байрамды яҡшы әҙерлек менән ҡаршы ала. Авиация мастерҙары, спортсмендар, пилоттар, парашютистар һәм авиамоделистар һаны йылдан-йыл арта бара.

1950—51 йылдар эсендә Досав ойошмаларының һәм ирекле общество члендарының һаны байтаҡҡа артты. Улар хәҙер республика күләмендә бөтәһе 24 мең кеше иҫәпләнә.

Общество члендары авиация техникаһын өйрәнеүгә ҙур әһәмиәт бирәләр. Был эш бигерәк тә Черниковск, Октябрьский ҡалаларындағы һәм Малаяҙ районындағы тәүге ойошмаларҙа яҡшы ҡуйылған. Авиация флотына булышлыҡ итеүҙә яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкәндәре өсөн Досавтың Черниковск ҡалаһындағы тәүге ойошмаһының председателе Афонов, Малаяҙ район үҙәгендәге тәүге ойошмаһының председателе Шанин һәм башҡа күп кенә иптәштәр Досавтың Башҡортостан Өлкә комитеты Почет грамотаһы менән бүләкләнделәр.

Авиацияға булышлыҡ итеү буйынса ирекле обществоның Башҡортостан Өлкә комитеты Досавтың Бөтә Союз Советы Үҙәк Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын бер нисә йыл инде үҙ ҡулында тота, һәм 1949 — 1950 йылда ике Почет грамотаһы менән бүләкләнде.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Колхоз партия ойошмаһы — юғары урожай өсөн көрәштә ойоштороусы

[illegible]

Б. Сафиханов,
Стәрлетамаҡ районы Карл Маркс исемендәге колхоз партия ойошмаһы секретары.

Комсомол ойошмалары секретарҙарының семинарҙарын регуляр үткәрергә

[illegible]

Күптән түгел райком мактәп комсомол ойошмаларының секретарҙәре өсөн бер көнлөк семинар, колхоз һәм МТС комсомол ойошмаларының секретарҙәре өсөн биш көнлөк семинар үткәрҙе. Унда «комсомол ойошмаларына етәкселек итеү стиле һәм методтары», «Колхозды ойоштороу-хужалык яғынан нығытыу эшендә комсомо-[illegible]

[illegible] исемендәге колхоз комсомол ойошмаһы секретаре иптәш Ғәлиев сығыш яһаны.

Комсомол ойошмаһы секретарҙарына үткәреләсәк семинар тураһында алдан белдереү уның ойошҡанлык һәм ҙур активлек менән үткәрелеүенә ярҙам итте. Ошондай семинарҙарҙы систематик рәүештә үткәреп тороу аҙ тәжрибәле секретар-[illegible]

Һәр бер яңы семинарға хәҙерге осорҙоң яңы талаптарын ҡуйып, беҙ комсомол ойошмалары секретарҙарына күберәк теоретик белем һәм етәкселек итеү эшенең практик күнекмәләрен бирергә тырышабыҙ.

В. Агапитов,
ВЛКСМ-дың Шаран райкомы секретаре.

Политбүлек тәүге ойошмаларға етерлек ярҙам күрһәтмәй

Өфө тимер юлы Стәрлетамаҡ бүлексәһенең политик бүлеге партияның тәүге ойошмаларын нығытыу буйынса күп кенә саралар билдәләне. Ләкин уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн көрәшмәй. Шул арҡала күп кенә тәүге партия ойошмалары политик бүлектең конкрет етәкселегенән ситтә торалар. Мәҫәлән, Аҡ күл, Ҡарлыман һәм 8-се разъезд станцияларындағы партия ойошмаларына политик бүлек бөтөнләй тиерлек ярҙам күрһәтмәй һәм етәкселек итмәй.

Политик бүлектең инструкторҙарынан Евсеев, Коротков һәм Исхаҡов иптәштәр станцияларҙағы партия ойошмаларына һирәк баралар. Унда поездан-поезға тиклем генә булалар ҙа эштең асылына иғтибар итергә ашығалар. Ә бер нисә сәғәт ваҡыт эсендә генә партия ойошмаларының эшен тәрән өйрәнеп, уларға ярҙам күрһәтеү мөмкин түгел, әлбиттә.

Политик бүлек начальнигы иптәш Фролов үҙе лә тәүге партия ойошмаларында һирәк була. Ул тәүге ойошмаларға йәнле, практик ярҙам күрһәтеү урынына, директивалар ебәреп ятыуҙы йәки телефон аша ғына күрһәтмәләр биреп тороуҙы яҡшыраҡ һанай.

Был бүлексәлә, күп кенә урында, етәкселек эшенә яңы килгән тәүге партия ойошмалары секретарҙарының ойоштороу-партия эшендә тәжрибәләре аҙ. Шуның менән улар даими ярҙамға мохтаждар. Политик бүлеккә был хәл билдәле булһа ла, ул тәүге партия ойошмалары секретарҙәре өсөн семинарҙар һәм инструктив кәңәшмәләр үткәрмәй.

Стәрлетамаҡ паровоздар депоһы партия ойошмаһында партияның эске эштәренең кимәле бик түбән. Был ойошмала май айында партия йыйылышы өс тапҡыр өҙөлдө. Унда партия йыйылышы ҡарарҙарының үтәлешен тикшереү эше ҡәнәғәтләнерлек түгел. Партия ойошмаһы администрацияның эшмәкәрлегенә контроллек итеү эшен насар ойошторған.

Политик бүлектең үҙ эшендә лә шул уҡ етешһеҙлектәр бар. Иптәш Фролов ай һайын эш планы төҙөй. Ләкин ул план һәр ваҡыт үтәлмәйенсә ҡала. Политик бүлек аппаратында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы үтәү өсөн көрәш большевистик принципиаллек менән алып барылмай.

Өфө тимер юлы Стәрлетамаҡ бүлексәһенең политик бүлегенә был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә һәм партия ойошмаларына етәкселекте яҡшыртырға ваҡыт инде.

Д. Егоров,
«Уфимский железнодорожник» газетаһы редакторы.

Производство отходтарын файҙаланыу — экономия өсөн көрәштә мөһим сара

[illegible]

Технологик бүлектең инженерҙәре һәм цех технологтары эшселәр, бигерәк тә элек, стахановсы-рационализаторҙар менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә элек ташлана торған деталдәрҙе файҙаланыу буйынса ныҡышмалы эш алып барҙылар һәм уларға паровоздың башҡа узелдарында урын билдәләнеләр. Шулай итеп, меңдәрсә иҫке деталь һайлап алып, уларҙың 150-һе производствола файҙаланырға яраҡлы итеп табылды. Элек улар ташланалар ине.

Ҡаҙандар цехында технолог иптәш Маслов, стахановсы Денискин һәм мастер Яшков иптәштәр ҡатнашлығында, иҫке контроль пробкалар һәм постановочный болттарҙы файҙаланыу технологияһын төҙөнө. Золотник колесниктарының һәм клапандарының привод рычагтарын, алғы ингектарҙың шптоктарын һәм башҡа деталдәрҙе производство отходтарынан етештереү технологияһы төҙөлдө. Был цехта отходтарҙы файҙаланыу буйынса технологияны индергәндән һуң 1951 йылдың биш айында 22 тонна ҡара металл һәм 200 килограммдан да артыҡ төҫле металға экономия яһалды.

Тимерлек цехында цех начальнигы иптәш Иванов, технолог иптәш Черёмин, нормировщик Первушин иптәштәр производство отходтарынан төрлө ҙурлыҡта гайкалар яһарға тәҡдим индерҙеләр. Тарталарҙың ҡорос втулкалары паровоздарҙың иҫке үҙәктәренән яһала башланылар. Был деталдәр элек ташланалар ине.

Металды экономиялы тотоноу буйынса заводтың йыйнау цехында ла ҙур ғына эштәр башҡарылды. Был цех коллективе, йыйнау эшен башҡарып, башҡа цехтарға ҡарағанда, болттар, гайкалар, шайбалар, валиктар, беректкестәр һәм башҡа шундай нығытыу деталдәрен күп ҡуллана. Был деталдәр элек, ҡатиҙә ра-үешендә, яңы металдан эшләнәләр, ә иҫке деталдәр түҙәнлыҡтан ташланалар ине. Завод начальнигы иптәш Мозговой инициативаһында һәм инженер-техник работниктар ярҙамында йыйнау цехында утиль бүлеге ойошторолдо. Был бүлеккә ике токарный һәм бер сверлильный ста-[illegible]

[illegible] тәптәр был тапҡәлә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшәләр. Улар төрлө тоткостар, тәрә рамалары, валиктар, болттар, гайкалар, шайбалар кеүек башҡа шундай деталдәр етештерәләр. Быларҙың бөтәһе лә отходтарҙан ғына яһала. 1951 йылдың 5 айы эсендә цех 25 тоннанан артыҡ яңы металды экономияға ҡалдырҙы.

Экономия өсөн көрәштә завод эшселәренең, рационализаторҙарының хеҙмәте ҙур. Улар суйын, ҡорос, бронза кеүек металдарҙы экономиялы тотоноу буйынса 26 рационализаторлыҡ тәҡдимдәр яһанылар. Шуның арҡаһында ла 1951 йылдың дүрт айы эсендә 13 тоннанан артыҡ ҡара, 720 килограмм төҫлө металға экономия яһалды.

Заводтың эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре отходтарҙы файҙаланыу иҫәбенән производствоның яңынан-яңы резервтарын табалар. Ләкин, әйтергә кәрәк, яңы металдың һәр бер килограмы өсөн көрәш бик ҙур хеҙмәт талап итә һәм ныҡышмалы эшләргә кәрәк. Шулай ҙа, эшсе-новаторҙарҙың һәм инженер-техник работниктарҙың берҙәм эшләүе һөҙөмтәһендә, металдарҙы экономиялау әлкәһендә завод быйыл биш ай эсендә 46 тонна суйынға, 280 тонна ҡоросҡа, 12 тонна электродҡа һәм 6,5 тонна төҫлө металға экономия яһаны.

Ләкин коллективтең бындай уңышына ҡарамаҫтан, эске резервтар тулыһынса асылып бөтмәгән әле. Илебеҙҙең әленән-әле үҫә барған экономикаһы предприятие коллективтарынан сырьё һәм материалдарҙы экономиялы тотоноуҙы, экономия буйынса бөтә резервтарҙы тулыһынса файҙаланыуҙы талап итә. Беҙҙең завод коллективе был талапты киләсәктә тағы ла яҡшыраҡ үтәү өсөн бөтә көсөн һалып эшләйәсәк.

Н. Федоров,
Өфө паровоздар ремонтлау заводының баш технологы,

К. Еникеев,
Өфө паровоздар ремонтлау заводының баш механигы.

Сит Ил Эштәре Министрлығында

[illegible]

Бөйөк юлбашсыға рапорт биреү өсөн

[illegible]

Йылдың биш айы эсендә завод, ритмлы эшләү арҡаһында, йөҙәр меңләгән һум пландан тыш накопление алды. Хәҙер заводта көндәлек нормаһын үтәмәгән эшселәр юҡ. Коллективтең төп бурысы — заводты тотошо менән коллектив стахановсы итеү.

Коллектив стахановсы булыу өсөн көрәшеүсе предприятиелар һаны беҙҙең районда арта бара. Электр оборудованиелары заводы коллективе Май алды социалистик ярышы инициаторы булған ине. Хәҙер уның эшендә ҙур уңыштарҙы күрһәтеп була. Заводтың 4 цехына һәм 2 участкаһына стахановсы исеме бирелде. Бында ла бурыс: заводты тотошо менән стахановсы итеү. Быны уңышлы үтәлеүенә һис бер шик юҡ.

Районда ярты йыллыҡ планды срогынан алда үтәүселәр рәтенә «Штрумтреб» фабрикаһын, лак-буяуҙар, резина изделиелары, декстрин һәм башҡа заводтарҙы һәм промышленность артелдарын индерергә мөмкин.

Районың завод-фабрикалары тарафынан яулап алынған уңыштарҙа ВКП(б) район комитетының һәм партияның тәүге ойошмаларының да роле ҙур.

Ләкин беҙ өлгәшелгән уңыштар менән һис тә тынысланырға тейеш түгелбеҙ. Беҙҙең предприятиеларыбыҙҙың эшендә әле күп кенә етешһеҙлектәр барлығын ясыу осорға ярамай. Йыш ҡына айҙың бер айҙа ҙурғыраҡ үтә, ә икенсе айҙа үтәп етермәү фактары осрай. Шулай булғас, предприятиеларҙың ритмле эшләүенә күберәк иғтибар бирергә кәрәк. Был шулай уҡ ВКП(б)-ның район комитетына ла ҡайтып ҡала.

Район партия ойошмаһының бурысы — 1951 йылдың 21 декабренә йыллыҡ планды бөтә предприятиеларҙа ла үтәүҙе тәьмин итеү һәм һөйөклө юлбашсыбыҙға рапорт биреү. Быны беҙ намыҫлы үтәйәсәкбеҙ.

Р. Валиев,
ВКП(б)-ның Ленин район комитетының промышленность бүлеге мөдире.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә

Тыныслыҡ фронты тағы ла нығыһын өсөн

Металлургтар ҡалаһының танылған ҡорос сыбыҡтар һуҙыусыһы Ҡыям Ғәбидуллин былтыр Стокгольм Воззваниеһына ҡул ҡуйғандан һуң ни эҙәр булғанын асыҡ хәтерләй. Белорет ҡорос-сыбыҡ заводының беренсе номерлы цех партия ойошмаһы секретаре иптәш Загребин бөтә сменаны ҡыҙыл мөйөшкә йыйнап алды. Иптәш Загребин ошо Воззваниеның тарихи әһәмиәте тураһында ялҡынлы телмәр һөйләне. Уның телмәренән һуң Воззваниеға ҡул тамғалар ҡуйыу башланып китте. Ана шул саҡта Ҡыям Ғәбидуллин ҙур аҙымдар менән өҫтәл янына барып баҫты. Бына ул ҡыйыу хәрәкәт яһап, ҡулына эҙҙәгәр тыштыҙы ҡәләм алды һәм күтәрелеп халыҡҡа ҡараны.

— Тыныслыҡ фронты тағы ла нығыһын өсөн, — тине ул тулҡынланып, — бынан һуң тик отлично сифатлы ғына продукция биреп эшләргә һүҙ бирәм. Мин ошо заводта ун һигеҙ йыл эшләп, үҙемә төшкән планды үтәмәй ҡалғаным юҡ. Ләкин һуғышты тағы ла булдырмаҫ өсөн былай эшләү генә бик аҙ әле. Бынан һуң мин икеләтә нығыраҡ эшләйәсәкмен... Мәһәбәт ҡаурыле, үткен ҡарашлы Ҡыям Ғәбидуллин был минуттарҙа ялҡынлы һәм айырыуса күтәренке рухлы ине. Уға шаулатып ҡул саптылар.

Был эш ике смена араһында булып алды. Ҡыямдар сменаһы төнөн эшләгәйне. Бына улар тын ҡала урамдары буйлап өйҙәренә ҡайталар. Ҡыям Ғәбидуллин әле генә цехта булып үткән ваҡиға, уның ни өсөн, халыҡ өсөн әһәмиәте тураһында уйланып ҡайта. Тирә-яҡ тып-тын. Ҡала өҫтөнә наүбәттәге хеҙмәт көненең бәхетле иртәһе килә. Ҡала урамдарында саф Урал һауаһы тора. Ошо һауаны мөмкин тиклем күберәк, тағы ла күберәк итеп эсе килә, әштән һуң үҙ өҫтөнә төшкән хеҙмәт бурысын намыҫ менән үтәгәндән һуң, ошондай тыныс иртәлә һалмаҡ ҡына атлап өйгә ҡайтыуы рәхәт бит.

Бына ошо кешелек рәхәтен Ҡыям Ғәбидуллиндән тартып алырға, тормош тыныслығын боҙорға кемдең хаҡы бар? «Һуғыш! Ой, ниндәй һәләкәтле нәмә ул һуғыш». Ҡыям Ғәбидуллин Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла бына ошо заводта эшләне. Ул мәкерле дошманды еңер өсөн, ул йылдарҙа ла завод эшенә аҙ көс һалманы. Фронт фондына пландан тыш йөҙәрләгән тонна ҡорос сыбыҡ һуҙып сығарҙы.

Ана шул дәһшәтле һуғышты тағы ла булдырмаҫ өсөн, ул һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды заводта бар кешенән алда үтәне. Бына хәҙер ул шул уҡ һуғышты булдырмаҫ өсөн отлично сифатлы продукция биреп эшләргә тип һүҙ биреп сыҡты.

Ләкин тыныслыҡ фронтын ҡаушамаҫ крепоскә әйләндерер өсөн был ғына етәме? Быны өсөн ябай ҡорос сыбыҡтар һуҙыусы Ҡыям Ғәбидуллин тағы нимә эшләй ала? «Юҡ, Ҡыям, һуғышты булдырмаҫ өсөн был ғына бик аҙ әле. Мәҫәлән, ул үҙенә бер бригада ойоштороп алып, шул бригада менән отлично сифатлы продукция биреү өсөн көрәшә ала. Был инде бер үҙең генә көрәшеү түгел бит. Һин смена һайын ни күп тигәндә 15—20 тонна продукция бираһең. Ә бригада менән 100 тоннанан артыҡ отлично сифатлы продукция биреп буласаҡ», Ҡыям Ғәбидуллин бына ошолай уйлай ине.

Ул үҙенең эшен яҡшы белә. Үҙ эшенең бөтә ни өсөн, тыныслыҡ фронтын нығытыу өсөн ниндәй ҙур әһәмиәткә эйә булып торғанын да бик яҡшы белә ул Ҡыям Ғәбидуллин. Сөнки Ҡыям Ғәбидуллин һуҙған ҡорос сыбыҡтарҙан канаттар үрәләр. Белорет ҡорос-сыбыҡ заводы үргән канаттар, күмер, руда шахталарында ғәҙел хеҙмәт итәләр. Ҡорос-сыбыҡ заводы бөйөк коммунизм төҙөлөштәренең заказын үтәй. Белорет ҡорос-сыбыҡ заводы эшләп сығарған ҡорос канат Волга—Дон каналын төҙөүҙә, Куйбышев, Сталинград гидроэлектростанциялары төҙөлөштәрендә актив ҡатнаша. Бына ниндәй ҙур, почетлы эш башҡара ул ябай ҡорос сыбыҡтар һуҙыусы Ҡыям Ғәбидуллин.

Шулай булғас, ул тыныслыҡ фронтын нығытыуға күп, бик күп ярҙам итә ала.

Бына ул төнгө эштән һуң ашыҡ-бошоҡ ашаны ла, эш кейемдәрен дә һалып тормайынса, кире цехҡа барҙы. Цех начальнигына:

— Мин отлично сифатлы продукция биреп эшләүсе бригада ойошторорға теләйем, миңә мөмкинлек бирегеҙ, — тине.

Цех партия ойошмаһы, администрация уға практик ярҙам күрһәттеләр. Цехком председателе уны отлично сифатлы бригадалар тураһындағы положение менән таныштырҙы. Бөтә коллектив уға был ҙур эштә уңыш теләне.

Ана шул көндөң төнгө сменаһынан сыҡҡан саҡта ул үҙен тормош юлында тағы ла бер баҫҡысҡа күтәрелгән кеше итеп һиҙгән хәлдә атлап барҙы. Уның сменаһы кешеләре лә шулай күреп ҡаршы алдылар.

Бына ул тәү башлап үҙ бригадаһы янына килеп баҫты. Барабандарын тиҙ генә көйләп ебәрҙе лә, баш ҡалҡытып иптәштәренә ҡараны. Бригада членлары ла эш башлағандар. Бөтә урында ҡыҙыу эш ҡайнай. Кешеләрҙең, хатта барабандарҙың тигеҙ ритмле хәрәкәттәрендә ниндәйҙер йыйнаҡлыҡ, алға ынтылыусанлыҡ аңҡып тора.

Ҡыям Ғәбидуллин шуны яҡшы белә: бригада өсөн ул беренсе наүбәттә үҙе өлгө булып торорға тейеш. Шул саҡта ғына уның артынан башҡалар намыҫ менән эйәрәсәктәр. Ошо көндән башлап ул үҙенең эш темпын икеләтә арттырып ебәрҙе, артабан ул тик отлично сифатлы ғына ҡорос сыбыҡтар һуҙып сығара башланы. Оҙаҡ ваҡыт үтмәне, техник контролдән үҙе һуҙған ҡорос сыбыҡ йомғаҡтарына уның үҙенә клеймо һуғырға рөхсәт иттеләр. Бынан һуң ул ана шул яулап алынған юғарылыҡтан түбән төшмәскә тырышты.

Ә бригада менән эш башта һүлпәнерәк барҙы. Сөнки, бригада членлары башта бөтәһе лә бер тигеҙ кимәлдә эшләмәй инеләр әле. Мәҫәлән, Куликов, Нагаев, Мусин иптәштәр һымаҡ ҡорос сыбыҡ һуҙыусылар Ҡыямдың үҙенән бер ҙә кәм эшләмәйҙәр. Ә коммунист Нагаевтың йыш ҡына бригадирҙан яҡшыраҡ эшләгән көндәре була. Ә бына ҡорос сыбыҡ һуҙыусы йәш эшсе Хужаахматовты ошо алдынғылар кимәленә күтәрер өсөн бер аҙ көс һалырға тура килде. Ул егеткә йыш ҡына һуҙырға яраҡһыҙ ҡорос сыбыҡ йомғаҡтары килеп эләгә ине. Егет складтан йомғаҡтарҙы ҡабул итеп алған саҡта, ниндәй ҡорос сыбыҡ икәнен тикшереп, тарап ҡарамай ине. Бындай саҡтарҙа уға бригадир ярҙамға килә. Хужаахматов фелләрҙәр менән яуаплыһыҙ мөғәмәлә итә. Ә бит феллер ҡорос сыбыҡтар һуҙыусы эшендә бөтә нәмәне хәл итә. Феллерҙең артынан ныҡ шы ҡүҙәтә белмәһәң, брак ғүмергә булмаҫаҡ.

Бындай хәлдәр баштараҡ һирәк-һаяҡ булғылаһылар, әлбиттә. Ләкин алға барған һайын ундай фактар һирәгәйә, бөтә барҙылар. Хәҙер инде бригадала Хужаахматовтан яҡшы эшләгән кеше юҡ.

Уға Ҡыям Ғәбидуллин ныҡ ярҙам итте. Сменанан һуң бер-ике сәғәткә цехта ҡалып ул Хужаахматовты эшкә өйрәтте, эш урынын алдан нисек әҙерләргә, ҡорос сыбыҡ остарын нисек ялғарға, феллерҙәр менән нисек эш күрергә кәрәк — Ҡыям үҙ эше менән байтаҡ күнекмәләр үткәрҙе, үҙе эшләп күрһәтте.

— Бөтә сер шунда, смена осоронда эш сәғәттәренә ингән һәр бер минут, секунд тулы нагрузка менән файҙаланылырға тейеш. Бер генә минут ваҡытығыҙҙы ла бушҡа үткәрергә тырышмағыҙ, тип әйтте ул йәштәрҙе.

Ҡыям Ғәбидуллиндең бөтә эш стиле шунан тора ла. Ул эш урынын алдан ентекләп әҙерләп ҡуя, эш тураһында йылдам хәстәрлек күрә, ул эш ваҡытын бөтә тулылығы менән файҙалана белә.

Ҡыям Ғәбидуллин ошо заводҡа инеп эшләй башлағандан бирле алдынғылар сафында эшләп килә. Башта ул шул уҡ беренсе номерлы цехта йөк ташыусы булып эшләне. Бер-ике йыл ваҡ[illegible] менән ҡорос сыбыҡ йомғаҡтары ташып йөрөнө. Ҡыям Ғәбидуллин ул саҡта ла смена һайын икешәр-өсәр норма үтәп торҙо.

Ҡыям Ғәбидуллин заводта беренсе ударник исемен алды. Стахановсылар хәрәкәте киңәйеп сыҡҡас та, ул ошо заводтың беренсе стахановсыһы булды. Бына икенсе йыл инде уға бик йыш «ҡаланың иң яҡшы эшсеһе» исемен биреп киләләр. Бына икенсе йыл инде үҙе отлично сифатлы продукция биреп эшләй. Икенсе йыл заводтың отлично сифатлы продукция биреүсе алдынғы бригадаһы менән етәкселек итеп килә һәм ул бик уңышлы етәкселек итә.

Ғәбидуллиндең бригадаһы беренсе номерле цехта ин ҡатмарлы, иң яуаплы эш башҡара. Алты миллиметрҙан алып, һигеҙ миллиметрға тиклем йыуанлыҡтағы ҡорос сыбыҡтар һуҙалар улар. Белорет металлургия заводының прокат цехынан килгән сыбыҡ йомғаҡтары һуҙылыу өсөн тәү башлап бына ошондағы барабандарға килеп эләгәләр.

Ҡыям Ғәбидуллин бригадаһы быйыл айырыуса яҡшы эшләй. Ул үҙе ғинуар айы планын 203 процентҡа, февралдә 196 процентҡа, март планын 200 процентҡа үтәгән. Икенсе кварталда ла шулай уҡ яҡшы эшләне, коммунизм төҙөлөштәре өсөн тырышып эшләй. Бригада членлары ла Ғәбидуллиндән уҙмай бер ҙә ҡалышмайҙар.

Отлично сифат өсөн көрәш бригаданың мөҡәддәс закон булып тора. Бригада был юғары исемде икенсе йыл инде үҙ ҡулында намыҫ менән тотоп килә. Ошо үткән йылда бригада иҫәбенән бер генә килограмм продукцияның да бракҡа сығарылыу факты булмаған. Бригада һөйөклө илебеҙгә пландан тыш меңдәрсә тонна отлично сифатлы продукция эшләп биргән.

Беҙ Ҡыям ағайҙың үҙ өйөндә ултырабыҙ. Ул үҙенең совет халҡы алдында күрһәткән ҙур хеҙмәттәре өсөн алған маҡтау грамоталарын күрһәтә. Улар Ҡыям ағайҙа бик күптәр. 1943 йылда уны ҡара металлургияның социалистик ярыш отличнигы значогы менән наградлағандар. Һуғыштан һуңғы беренсе йылда уҡ ул яҡшы эшләгән өсөн Почет грамотаһы менән наградланған. Башҡортостандың 30 йыллығы айҡанлы Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Президиумы уны тағы бер тапҡыр Почет грамотаһы менән наградлаған. Грамоталар араһында Мәскәүҙән Главметиз управлениеһынан, металлургтар профсоюзының Үҙәк комитетынан алған бер нисә ҡотлау телеграммаһы бар. Шул телеграммаларҙың береһендә «Үҙегеҙҙең стахановсы хеҙмәтегеҙ тыныслыҡ фронтын нығытаһығыҙ» яҙылған. Ҡыям Ғәбидуллин ошо телеграмманы уҡып сыҡҡас та, тәҙрәһынан йәйелеп ятҡан ҡала өҫтөнә ҡараны.

— Тыныслыҡ! Ана шул тыныслыҡты тағы ла нығытыр өсөн беҙҙең күп эшләйһебеҙ бар әле. Илдең [illegible] ның киләсәктәге именлеге [illegible] та, беҙҙең үҙ ҡулыбыҙҙа шул. — [illegible]

М. Хәйҙаров,
Белорет ҡалаһы.

Йәш нефтселәрҙең дүртенсе стахановсы слеты

БӨЙӨК СТАЛИНГӘ БИРГӘН ВӘҒӘҘӘНЕ НАМЫҪ МЕНӘН ҮТӘҮ ӨСӨН

Йөкләмә уңышлы үтәлә

Н. М. КУВШИНОВ—„Ишембайнефть“ тресының 4-се номерле промыслаһының смена мастеры.

Беҙҙең промыслала коллективе Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталингә яҙған хатында [illegible] мең тонна пландан тыш нефть бирергә [illegible]. Хәҙер был йөкләмәне коллектив намыҫ менән үтәй. Уны үтәүҙә промыслала йәштәребеҙ һәм комсомолецтарыбыҙ [illegible] хеҙмәте ҙур. [illegible] Нефть сығарыу буйынса беҙ үҙебеҙгә государство [illegible] алда арттырып үтәйбеҙ. [illegible] социалистик ярышты киң йәйелдерәбеҙ. Ярышта бик күп яңы новаторҙар үҫеп сыҡтылар. Мәҫәлән, йәш эшселәрҙән Тимонин, Замесин, Федоров, Безруков һәм башҡа йәш иптәштәр күренекле урын алып торалар.

Ләкин беҙҙең уңыштар ниндәй генә ҙур булмаһын, беҙ өлгәшелгәндәр менән тынысланып ҡалмайбыҙ. [illegible] Техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланып, сырьё һәм материалдарға экономия яһап, скважиналар эшенең технологик режимен дөрөҫ көйләп һәм шуның менән бергә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреп, беҙ нефть һәм газ сығарыуҙы [illegible] күтәреү буйынса яңы резервтар асыу өсөн көрәшәбеҙ.

Беҙҙең промысла комсомолецтары [illegible] алдынғы стахановсыларҙың патриотик [illegible]. Мәҫәлән, Бафаров, Корабельникова, Ковалев һәм башҡа новаторҙарҙың [illegible].

Ләкин [illegible] йәштәргә, промыслаһының инженер-техник работниктары [illegible] ярҙам итергә тейеш.

[illegible] Беҙ, йәштәр, партия һәм комсомол ойошмалары етәкселегендә, артабан да яҡшы эшләү өсөн көрәшәбеҙ. Тыуған иленең ныҡлығына һәм коммунизм төҙөү эшенә вклад индерәбеҙ.

Тыуған илебеҙгә күберәк нефть биреү өсөн көрәшәбеҙ

Р. М. ӘХМӘТШИНА—„Ишембайнефть“ тресы өсөнсө номерле промыслаһының мастер ярҙамсыһы

Өсөнсө номерле промысла коллективы тынысҡыты артабан нығытыу һәм иптәш Сталингә биргән вәғәҙәне үтәү юлында ҙур уңыштарға өлгәште. Беренсе ярты йыллыҡ планды 19 июндә үтәне һәм илебеҙгә пландан тыш меңәр тонналаған нефть бирҙе. Планды үтәүҙә коллективтың инициативаһы, ижади хеҙмәте ҙур роль уйнай. Беҙ нефть сығарыусы ике бригаданы берләштерҙек. Бригадаларҙы берләштереү 200 мең һумлыҡ экономия бирҙе һәм 21 эшсене, инженер-техник работникте икенсе эшкә күсерергә мөмкинлек бирҙе. Бынан тыш башҡа күп төрлө практик эштәр башҡарыу скважиналар эшен үҙ ваҡытында тикшереп торорға, ер аҫты ремонттарын үткәреү өсөн скважиналарҙы яҡшыраҡ әҙерләргә мөмкинлек тыуҙы.

Инженер Ковалев методын производствоға индереү ҙур хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Тимерсе Бородай, слесарь Әсфәндияров, ключник Хәбибуллин иптәштәр үҙ нормаларын систематик 130—200 процентҡа үтәйҙәр.

Промыслала рационализаторлыҡ тәҡдимдәре индереүгә айырыуса ҙур урын бирелә. Быйыл ярты йыл эсендә 27 рационализаторлыҡ тәҡдим яһалып, уларҙың 22-һе производствоға индерелде. Яңы техника индереү буйынса Молчанов аппаратын ҡулланыу ер аҫты ремонтында хеҙмәт етештереүсәнлеген 10 процентҡа күтәрҙе. Беҙ хәҙер промыслала тыныҡ әҙерлек эштәрен уңышлы башҡарабыҙ.

Ләкин өлгәшелгән уңыштар менән бер рәттән, беҙҙә яңы техника индереү, Молчанов аппаратын тулы ҡеүәтендә файҙаланыу буйынса етешһеҙлектәр бар. Уларҙы бөтөргәндә, беҙҙең коллектив тағы ла яҡшыраҡ эшләй алыр ине.

Вәғәҙә намыҫ менән үтәлер

А. П. МОСКОВОЙ—„Туймазыбурнефть“ тресының икенсе номерле бораулау контораһы токаре

Беҙҙең механика мастерскойы коллективе хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү өсөн ҙур тырышлыҡ менән эшләй. Үҙ яңы буровойҙарҙы оборудованиелар менән йыһазландыра. Был бурыстарҙы үтәү өсөн коллективтың бөтә мөмкинлектәрен максималь файҙаланырға кәрәк. Бораулауҙа булған прогресс беҙҙең коллективтан да өлөнән-әле яңы эш методтарын ҡулланыуҙы талап итә. Беҙ шулай эшләйбеҙ ҙә.

Стахановсыларҙың иң яҡшы эш алымдарын производствола ҡулланыу артта ҡалыусыларҙы алдынғылар сафына сығарыуҙа, үҙ нормаларын үтәмәүселәрҙең һанын ҡыҫҡартыуҙа беҙгә ҙур ярҙам итте. Элек нормаһын үтәмәүселәр 12 кеше һаналһа, хәҙер улар икәү генә. Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә коллективтең төрлө штамптарҙы һәм ҡулайламаларҙы әҙерләүе, оборудованиеларҙы максималь файҙаланыу буйынса социалистик ярыш йәйелдереүе ҙур роль уйнаны. Оҙаҡ ваҡыттар буйы эшләмәй ултырған шлифовка станоктары, фракцион престар, болт ҡырҡыу станоктары ходҡа ебәрелделәр. Был практик саралар бөтәһе лә механика мастерскойы коллективена хеҙмәт етештереүсәнлеген 140 проценттан алып 165 процентҡа тиклем күтәрергә һәм күсмә Ҡыҙыл Байраҡты үҙ ҡулында тоторға мөмкинлек бирҙе.

Беҙҙә артабан да яҡшы эшләү өсөн әҫке мөмкинлектәр күп. Уларҙың иң мөһимдәре булып тиҙләтелгән юл менән үткәрләү, детальдарҙың технологияһын дөрөҫ төҙөү һәм башҡалар тора.

Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталинға яҙған хатындағы алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн беҙҙең коллектив үҙенең бай әҫке резервтарын мобилизовать итә алыуына ышана. Һөйөклө юлбашсыға бирелгән вәғәҙә, һис шикһеҙ, намыҫ менән үтәләсәк.

Етәкселәрҙең ярҙамы беҙгә күберәк кәрәк

А. И. ПРЯДКО—„Ишембайнефть“ тресының бораулау контораһы комсомол ойошмаһы секретаре

«Ишембайнефть» тресының бораулау контораһы коллективе быйылғы ярты йылда ҙур ғына уңыштарға өлгәште. Хәҙер беҙҙең бораулаусылар, үткән йылға ҡарағанда ла, ҙурыраҡ инициатива күрһәтәләр.

Ләкин шуның менән бер рәттән, беҙҙә ҙур ғына етешһеҙлектәр һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә мөмкинлек биреүсе файҙаланылмаған резервтар бар. Бөтәһенән элек, «Башнефть» берекмәһе беҙгә запас частар менән регуляр тәьмин итмәй. Дизель моторҙарына запас частар ебәреү тураһында һорауға берекмә етәкселәре нисә бер писа айҙар буйы яуап биргәне юҡ. Көс агрегаттарына ҡуйылған моторҙарға запас частәр, аккумуляторҙар, стартерҙар, реле-регуляторҙар һәм башҡалар талап ителә. Улар етешмәй. Һөҙөмтәлә ҡайһы бер оборудованиелар беҙҙә тулы комплектле түгел.

Беҙ күсмә кино установкаһы өсөн бер нисә йыл инде движок һорайбыҙ. Ләкин беҙҙең һорау әле ҡәнәғәтләндерелгәне юҡ. Эш шарттарына килгәндә, махсус өҫ һәм аяҡ кейемдәре кеүек, нәмәләр менән тәьмин итеү тейешле кимәлдә тормай. Шуның өсөн дә техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен боҙоу факттары осрай. Уларҙын бөтәһе лә хеҙмәт күтәрелешенә аяҡ сала, эштә ҙур ғына тотҡарлыҡтар яһай.

Булған етешһеҙлектәрҙе бөтөргәндә, тағы ла юғарыраҡ уңыштарға өлгәшә алыр инек. «Башнефть» берекмәһе етәкселәре беҙгә тейешле ярҙамды күрһәтһендәр ине.

Республика йәш нефтселәренең слеты

28 июнда Өфө ҡалаһында республикабыҙ йәш нефтселәренең дүртенсе республика слеты булып үтте. Слет ВЛКСМ-дың Өлкә Комитете, «Башнефть» һәм «Башнефтезаводтар» берекмәләре тарафынан үткәрелде. Слетта Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләренең үтәлеше тураһындағы мәсьәлә ҡаралды. Был турала «Башнефть» берекмәһе начальнигы иптәш Кувыкин доклад менән сығыш яһаны.

Һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллыҡ осоронда республикабыҙҙың нефть промышленносе ҡыҙыу темптар менән үҫте. Был ваҡыт эсендә нефть сығарыу 250 процентҡа, уртаса тәүлеккә нефть сығарыу, һуғышҡа тиклемге кимәл менән сағыштырғанда, 5,1 тапҡырға артты.

Үҙҙәренең әҫке мөмкинлектәрен иҫәпләп, Башҡортостан нефтселәре быйыл да Бәку һәм Куйбышев нефтселәре менән социалистик ярышты дауам иттерергә ҡарар иттеләр һәм, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға хат яҙып, күтәренке йөкләмәләр алдылар. Даһиға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн Башҡортостан нефтселәре, алдынғы совет техникаһын ҡулланып, социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйеп ебәрҙеләр.

1951 йылдың биш айы эсендә нефть сығарыу планы «Башнефть» берекмәһе буйынса арттырып үтәлде. Нефттең үҙенә төшөү хаҡы, планға ҡарағанда, 1,6 процентҡа кәмене. Бораулау планы 103,3 процентҡа үтәлде. Машиналар төҙөү планы ла байтаҡ арттырып үтәлде.

«Туймазыбурнефть» тресы коллективы үҙенең быйылғы биш айлыҡ производство программаһын 101 процентҡа үтәне. Ишембай бораулаусыларының план үтәлеше 124,4 процент тәшкил итте. Бындай алдынғы предприятиелар «Башнефть» берекмәһендә күп. Улар, партия, комсомол һәм профсоюз ойошмалары етәкселегендә социалистик ярыш байрағын тағы ла юғарыраҡ күтәреп һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне срогынан алда тамамлау өсөн рухланып, йыллыҡ производство программаһын арттырып үтәү буйынса көрәш алып баралар. Социалистик ярышта йәш нефтселәр алдынғы сафталар.

Бөтә Союз социалистик ярыш йомғаҡтары буйынса «Туймазынефть» тресының беренсе номерле промыслаһына СССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағы һәм беренсе премия бирелде. Ә «Туймазыбурнефть» тресының тракторҙар контораһы коллективе Бөтә Союз социалистик ярышында өсөнсө урынды яулап алды.

1951 йылдың биш айында индерелгән 776 рационализаторлыҡ тәҡдимдең 230-ы йәш нефтселәр тарафынан индерелде. 152 рационализаторлыҡ тәҡдим производствоға индерелде лә инде. Былардан 362 мең һум экономия алынды.

Һуңынан «Башнефтезаводтар» берекмәһе начальнигы иптәш Осадченко ҡушма доклад менән сығыш яһаны.

Фекер алышыуҙарҙа йәш нефтселәр үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар, күп кенә етешһеҙлектәрҙе астылар һәм уны бөтөрөүҙе талап иттеләр.

Һуңынан республикабыҙҙың алдынғы нефтселәренә «Почет грамоталары» һәм ҡиммәтле бүләктәр бирелде.

Юғары сифатлы продукция өсөн

Р. ТЮРИН—Өфө нефть эшкәртеү заводының өлкән операторы

Өфө нефть эшкәртеү заводының иптәш Закиров етәкселегендәге отличло сифат цехы коллективе үҙенең биш йыллыҡ планын өс йылда 11 ай эсендә үтәне. Ә беҙҙең бригада коллективе, цехҡа ҡарағанда, уны бер ай элегерәк тамамлап, Тыуған илебеҙгә пландан тыш меңәрләгән тонна юғары сифатлы нефть эшкәртеп бирҙе.

Үткән биш йыллыҡ эсендә хеҙмәт етештереүсәнлеге ике тапҡырҙан да артығыраҡҡа күтәрелде. Эшкәртелгән нефттең сифаты ун тапҡырға яҡшырҙы. Элекке быҫраҡ цех, хәҙер таҙа, культуралы цехҡа әйерелде.

Хеҙмәт етештереүсәнлегенең күтәрелеүе менән бер рәттән, цехтың квалификациялы кадрҙары ла үҫеп сыҡты. Иптәш Закиров 1946 йылда ғына өлкән оператор булып эшләй ине. Хәҙер ул цех начальнигы. Иптәш Боярченко, операторҙан өлкән операторға үрләп, хәҙер бригада менән етәкселек итә. Уның бригадаһы производство планын айҙан-айға арттырып үтәй һәм юғары сифатлы продукция етештерә. Беҙҙең заводта бындай эшселәр күп.

Заводта сырьеға һәм материалдарға комплекслы экономия яһау буйынса Лидия Корабельникова һәм Федор Кузнецов иптәштәрҙең гүзәл башланғыстары ҡайнар отклик тапты. Беҙҙең бригада коллективе экономияланған реагенттар иҫәбенә һәр ай һайын 4 тапҡыр вахтала эшләй. Һөҙөмтәлә коллектив быйыл биш ай эсендә ҙур ғына экономик күрһәткестәргә өлгәште. Биш айлыҡ производство планы срогынан алда 101.7 процентҡа үтәлде. Етештерелгән продукция юғары баһа алды.

1951 йылда нефть эшкәртеү установкаларына байтаҡ камиллаштереү үткәрелергә тейеш. Беҙҙең коллектив алдында иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә производствоның яңы технологияһын үҙләштереү, нефть эшкәртеүҙе яҡшыртыу, етештерелгән продукцияның сифатын күтәреү бурысы тора. Сәнки тормош туктауһыҙ алға бара. Стахановсы тәжрибәләр һәр көн һайын производствоға күберәк индерелә баралар.

ВЛКСМ-дың Өлкә Комитеты, «Башнефтезаводтар» берекмәһе был мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн етерлек эшләгәне юҡ әле. Һуңғы биш йыл эсендә беҙҙең заводтың бер генә эшсеһе лә Тыуған илебеҙҙең башҡа нефть эшкәртеү заводтарында булманы, ундағы алдынғы эш тәжрибәләре менән танышманы, үҙенең эш методтары менән дә уртаҡлашманы. Өфө нефть эшкәртеү заводы менән Ишембай нефть эшкәртеү заводы — икеһе лә бер берекмә составындағы заводтар. Уларҙың етештереү технологияһы бер төрлө. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был ике предприятие араһында ҙур ғына айырма бар. Беҙҙең заводта нефть яҡшы, ә Ишембай нефть эшкәртеү заводында насарыраҡ эшкәртелә. Әгәр улар беҙҙең заводтағы алдынғы кешеләрҙең эш алымдарын өйрәнһәләр, уларҙың продукцияһының сифаты яҡшырыр, хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелер, нефть эшкәртеүҙең үҙенә төшөү хаҡы кәмер ине.

Йәштәр—төҙөлөштә ҙур көс

Л. И. КОСТЫЛЕВ—2-се номерле Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһының 4-се разряд штукатуры

Беҙҙең төҙөлөш управлениеһында йәштәр күп кенә һан тәшкил итә. Уларҙың яртыһынан күберәге ФЗО мәктәптәрен тамамлаған. Тик беҙҙең комсомол ойошмаһы ғына ла үҙенең составында 100-ҙән артыҡ комсомолец иҫәпләй. Шуныңлыҡтан комсомолецтар һәм йәштәр коллективта ҙур көс булып торалар.

Комсомол ойошмаһы инициативаһында беҙҙә комсомолец-йәштәр бригадалары ойошторолоп, улар араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелдә. Ярышта беҙ айырыуса ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Сөнки унда төрлө ижади инициативалар, алдынғы эш методтары күтәрелеп сыға. Социалистик ярыш йомғаҡтары күрһәткес таҡталарында систематик яҙылып бара. Эште шулай ойоштороу һөҙөмтәһендә, комсомолец-йәштәр бригадалары үҙҙәренең айлыҡ эш пландарын систематик үтәп һәм арттырып үтәп баралар.

Мин эшләгән штукатурҙар бригадаһы 1951 йылдың биш айлыҡ производство программаһын 125 процентҡа үтәне. Хәҙер беҙҙең бригада коллективе «Стахановсы бригада» исемен алыу өсөн көрәшә. Бының өсөн беҙҙә бар мөмкинлектәр бар.

Юғары етештереүсәнле эшләү өсөн, әлбиттә кәрәк, эшселәрҙең тормош һәм эш шарттарын яҡшыртыу ҙур әһәмиәткә эйә. Артабан да яҡшы эшләү, үҙебеҙҙең квалификацияны күтәреү өсөн 2-се номерле төҙөлөш управлениеһында бөтә шарттар тыуҙырылған. Беҙ, йәш төҙөүселәр, матур һәм культуралы йыһазландырылған торлаҡтарҙа йәшәйбеҙ. Унда ҡыҙыл мөйөштәр ойошторолған, беседалар, ҡысҡырып газета һәм художестволы китаптар уҡыу үткәрелә, волейбол һәм башҡа спорт уйындары өсөн махсус майҙандар бар.

Беҙ эшләйбеҙ ҙә һәм культуралы ял да итәбеҙ. Шуныңлыҡтан беҙҙең эш тә ырай. Төҙөүсе йәштәр тураһында шундай хәстәрлек өсөн коммунистар партияһына һәм һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға ҙур рәхмәт! Икенсе номерле төҙөлөш управлениеһы йәштәре һәм комсомолецтары бындай тормош өсөн Тыуған илебеҙгә күпме кәрәк, шул тиклем көсөн һалып эшләр. Беҙ киләсәктә лә тиҙ, арзан, ныҡ һәм срогынан алда төҙөрбеҙ. Һәм иптәш Сталинға биргән вәғәҙәләребеҙҙе беҙ, төҙөүсе йәштәр, намыҫ менән үтәйәсәкбеҙ. Быға шик юҡ!

Йәш нефтселәрҙең республика слетында ҡатнашыусыларҙан бер төркөм.

Һүрәттә: (һулдан уңға) «Туймазыбурнефть» тресының 2-се номерле бораулау контораһы бораулаусыһы **А. З. Кузнецов**, «Ишембайнефть» тресының скважиналар тикшереү мастеры **В. И. Шмалинова**, «Туймазыбурнефть» тресының 2-се номерле бораулау контораһының бораулау мастеры **Р. Х. Аллаяров**, «Туймазынефть» тресының газокомпрессор хужалығының участка начальнигы **К. А. Ряхов**, «Ишембайнефть» тресының 3-сө номерле нефть промыслаһы мастеры ярҙамсыһы **Р. М. Әхмәтшина**, беренсе номерле нефть промыслаһы операторы **В. А. Андреев** һәм бораулаусы **В. Д. Чубаркин** иптәштәр.

А. Зарaeв фотоһы.

Коммунизм төҙөүгә

А. А. ШУҒУПОВ—Ишембай нефть эшкәртеү заводының ремонт-төҙөлөш цехы мастеры

Беҙгә, йәш быуынға, Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәтен нығытыу, илебеҙҙә коммунизм төҙөү өсөн эшләргә тура килә. Шуға ла беҙ үҙебеҙҙең бөтә көсөбеҙҙө һәм энергиябыҙҙы һалып эшләйбеҙ.

Беҙҙең коллективта йәш стахановсылар һәм производственниктар аҙ түгел. Оператор Исакова, газосварщик Костюченко, лаборанткалар Сатонина һәм Чугунова иптәштәр кеүек, алдынғы йәш эшселәр күп. Уларҙың бөтәһе лә — стахановсылар. Бындай нефтселәр менән беҙҙең завод коллективе законлы горурлана.

Ләкин беҙ уңышлыҡтар менән бер рәттән, «Башнефть» берекмәһенең етәкселәренә, шулай уҡ күп кенә талаптар ҙа ҡуябыҙ. Бөтәһенән элек, хәҙергә ҡәҙәр заводта самаһан тыш мазут күп. Уны ҡарамлы урынға оҙатыу өсөн завод администрацияһы ла һәм «Башнефть» берекмәһе етәкселәре лә тейешлә сара күрмәйҙәр. Мазутты беҙ һаҡлау өсөн ерҙән эшләнгән келәттәргә ҡуйҙыҡ. Хәҙер улар ҙа тулды инде. Шуныңлыҡтан шундай картина килеп тыуа: производство планын арттырып үтәргә кәрәк, ә уны үтәү өсөн мөмкинлектәр юҡ.

Беҙҙең коллектив яҡшы эшләй белә һәм шулай эшләргә теләй ҙә. Әгәр февраль, март айҙарында коллектив государство программаһын үтәп еткермәһә, ә май айында ул планды үтәү генә түгел, I кварталда ҡурған эшлектарҙы һәм государствоға булған бурыстарҙы ҡапланы. Ләкин коллектив өсөн хәҙер мазут хәл итә алмай торған проблема булып әйерелде. Был ғына ла түгел. мазут, шулай уҡ ерҙән эшләнгән келәттәрҙә оҙаҡ ятҡанлыҡтан, үҙенең элекке сифаттарын юғалта һәм брактҡа айлана. Шуныңлыҡтан етәксе работниктарҙың бындай киҫкен хәлгә тиҙ көндә әһәмиәт биреүҙәре талап ителә.

Беҙ Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталинға биргән вәғәҙәләрен бер ваҡытта ла онотмайбыҙ. Һәр бер цехта, бригадала һәм участкала бөйөк юлбашсыға бирелгән вәғәҙәләрҙе үтәү өсөн көрәш бара. Нефть эшкәртеүселәр уны уңышлы үтәйҙәр һәм иптәш Сталинға уңыштар тураһында рапорт бирерҙәр.

Юғары етештереүсәнле эшләйбеҙ

Я. Е. ГОРБАЧЕВ—Сталин исемендәге Ишембай машиналар төҙөү заводы нормировщигы

Машина төҙөүселәр, үткән йылдағы кеүек, быйыл да байтаҡ ҙур производство уңыштары яулап алыуға өлгәштеләр. Был ваҡыт эсендә нефтселәр өсөн күп төрлө яңы изделиелар эшләп сығарҙылар. Улар тарафынан етештерелгән машиналар нефть промыслаларында һәм буровойҙарҙа юғары етештереүсәнле эшләйҙәр.

Машина төҙөүселәр араһында йәштәр күп кенә. Улар үҙҙәренең намыҫлы хеҙмәттәре менән коллективтың маҡтауына лайыҡлы булалар. Стахановсыларҙан токарҙар Разин, Панкратов, Чижиков, строгальщиктар Сыропятов, Девяткин; котельщиктар Максимов, Таламанов; слесарҙар Сидельников, Байдуков; электромонтёр Кузнецов һәм башҡа иптәштәр смена нормаларын систематик 200—300 процентҡа үтәйҙәр.

Новаторҙарҙың алдынғы эш тәжрибәләрен производствоға индереү завод коллективының уңышлы эшләүенә ныҡ ярҙам итә. Бында токарҙарҙан Панкратов, Чижиков, Разин һәм Брайцев иптәштәр металдарҙы тиҙләтелгән метод буйынса эшкәртеүҙе заводта беренсе булып башлап ебәрҙеләр. Хәҙер улар ҡырҡыу тиҙлеген минутына 600—700 метрға тиклем еткерәләр.

Инженер Ф. Ковалев методы буйынса стахановсыларҙың алдынғы эш алымдарын өйрәнеү, дәйемләштереү һәм таратыу хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә тайяр ҙур роль уйнаны.

Механика цехының күп кенә йәш эшселәре стахановсы мәктәптәрҙә алдынғы эш методтарын өйрәтеү буйынса етәкселек итеү дәрәжәһенә күтәрелделәр.

Уңыштар бар, ләкин беҙҙә етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел. Заводтың комсомол һәм профсоюз ойошмалары дәйем торлаҡтарҙа йәшәүсе йәш эшселәрҙең тормош һәм көн-күреш шарттарын яҡшыртыу тураһында ҡәнәғәтләнерлек хәстәрлек күрмәйҙәр. Дәйем торлаҡтарҙа йәштәрҙең культуралы ял итеүҙәре өсөн булмалар юҡ, эсеү өсөн һыу ҡайнатылмай.

Был етешһеҙлектәр бөтөрөлөргә тейеш.

Алдынғы колхоздарға һәм тәжрибә баҫыуҙарына экскурсиялар

Бөгөн хәҙер алдынғы методтарҙы үҙләштереп, тотороҡло юғары урожай алыуға һәм малсылыҡты үҫтереүгә ирешкән колхоздар һәм совхоздар һаны йылдан-йыл арта бара. Хеҙмәт етештереүсәнлеген юғары күтәреүсе ауыл хужалығы мастерҙары ла күбәйгәндән-күбәйә баралар. Хәҙер алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен ентекләп өйрәнеү, уларҙы дөйөмләштереү һәм бөтә колхоздарҙа һәм совхоздарҙа, бригадаларҙа һәм фермаларҙа таратыу талап ителә.

Был мәсьәләне уңышлы хәл итеүҙә алдынғы хужалыҡтарға массовый экскурсиялар үткәреү планлаштырылды. Ауыл хужалығы министрлығының пропаганда управлениеһы июнь, июль һәм август айҙарында алдынғы колхоз, совхоз һәм тәжрибә учреждениеларына экскурсиялар ойоштороу буйынса план төҙөнө. План буйынса республикабыҙҙың бөтә колхоз, совхоз һәм МТС етәкселәре, колхозсылар, совхоз һәм МТС эшселәре, специалистар 50 алдынғы хужалыҡта экскурсияларҙа булырға һәм алдынғыларҙың тәжрибәһен өйрәнергә тейештәр.

Дәүләкән МТС-ы республикабыҙҙа берҙән-бер күргәҙмә-тәрәҙ МТС булып тора. МТС работниктәре һуңғы 5-6 йыл эсендә ҙур уңыштарға өлгәштеләр [illegible] курсияға килергә һәм урында трактор бригадаларында, колхоздарҙа МТС-тың уңышлы эш тәжрибәләрен өйрәнеп таратырға тейештәр.

Бүздәк районында Тимирязев исемендәге колхоз тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу буйынса сталинса планды уңышлы үтәүҙә республикабыҙҙа алдынғы колхоздарҙың берсеһе булып иҫәпләнә. [illegible]

Былай экскурсиялар Учалы районының «Ҡыҙыл партизан», Балтас районының Куйбышев исемендәге һәм башҡа күп кенә алдынғы колхоз тәжрибәһен өйрәнеү өсөн үткәреләсәк.

План буйынса Бәрә, Өфө, Стәрлетамаҡ тәжрибә баҫыуҙарына, Кушнаренко емеш-еләк тәжрибә станцияһына, Шишмә селекцион станцияһына, Өфөләге ботаника баҡсаһына күп экскурсанттар килергә тейеш. [illegible] ҙы ойоштороға кәрәк. Экскурсия үткәреүсе алдынғы колхоз, совхоз һәм тәжрибә учреждениелары алдында тағы ла яуаплыраҡ бурыстар тора. Улар экскурсанттарҙы яҡшылап ҡаршы алыуҙы, үҙҙәренең ҡаҙаныштарын бик яҡшы уйлап пропагандалауҙы ойошторорға тейештәр.

В. Ғирфанов.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Саҡмағош районындағы «Холодный ключ» колхозы 1200 точкалы яңы радиоузел һатып алды. Радиоузел тиҙҙән эшләй башлап, 10 ауылды хеҙмәтләндерәсәк.

Р. Яҡупов.

* * *

Үрге Ҡыйғы ауылында (Ҡыйғы районы) инкубатор станцияһы төҙөлөп, ошо көндәрҙә эшкә башланы. Ул быйылғы сезонда 77 мең себеш алыуҙы планлаштырҙы. Станцияға техник Туктаров етәкселек итә.

З. Вәлиев.

* * *

Ошо көндәрҙә Бөрйән район культура йортонда Башҡорт государство филармонияһының артистәре ике бүлектән торған ҙур концерт ҡуйҙылар. Артистарҙан Ғәлиев, Ғәйнетдинова һәм баянист Миңләхәнов иптәштәрҙең сығыштары тамашасыларҙа айырыуса йылы тәьҫир ҡалдырҙы.

В. Мораҙбаев.

* * *

Күгәрсен районы «Красный Октябрь» колхозында 20 йылдан артыҡ инде йылҡы ҡараусы булып Ростов Иван эшләй. Ул йыл һайын яҡшы ҡолондар үҫтерә.

Ул быйыл 31 бейәнән 31 ҡолон алды һәм ҡолондарҙы яҡшы тәрбиәләй.

Иптәш Ростов намыҫлы хеҙмәте өсөн 1950 йылда игенләтә 520 килограмм өҫтәмә хеҙмәт хаҡы алды.

«Красный Октябрь» колхозы йылҡы малдарын һан яғынан арттырыу менән бер рәттән, уларҙың тоҡомдарын яҡшыртыу буйынса ла ҙур эш алып бара.

М. Әмирғәлин.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 28 июнь. (ТАСС). Корея Халыҡ Демократик Республикаһы Халыҡ армияһының Баш командованиеһе былай тип белдерҙе: Корея Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән тығыҙ бәйләнештә хәрәкәт итеп, фронттың айырым участкаларында урындағы әһәмиәтле һуғыштар алып баралар һәм Америка-Англия интервенттәренең ғәскәрҙәренә һәм лисынмансы армияға йәнле көстә һәм техникала ауыр юғалтыуҙар килтерҙеләр.

28 июндә зенит артиллерияһы һәм уҡсы истребителдәр дошмандың 5 реактив истребителен бәреп төшөрҙөләр.

Я. А. Маликтең белдереүе тураһында Америка матбуғаты

Нью-Йорк, 27 июнь. (ТАСС). Я. А. Маликтең Кореяла һуғышты туҡтатыу тураһындағы тәҡдиме АҠШ-та хатта консерватив элементтар араһында ла киң яҡлау таба. Ассошиэйтед пресс агентствоһының Вашингтондағы хәбәрсеһенең белдереүенә ҡарағанда, вәкилдәр палатаһының члены, республиканец Поттер (Мичиган штатынан), «был һуғышта еңеүгә беҙҙең, күренеүенсә, бер нинди ҙә өмөтөбөҙ» булмағанлыҡтан, АҠШ һуғышты 38-се параллелдә туҡтатыуға бара ала, тип белдергән.

Вәкилдәр палатаһының сит ил эштәре буйынса комиссия члены демократ Мэнсфилд (Монтана штатынан) шулай уҡ утты туҡтатыуҙы яҡлап фекер әйткән.

«Кливленд Ньюс» газетаһы ла утты тиҙерәк туҡтатыуҙы яҡлап сығыш яһай һәм былай тип яҙа: «Ни генә булһа ла, Кореялағы һуғышты тиҙерәк туҡтатыу тураһында һөйләшеп килешеүҙәргә ынтылышҡа бер нәмә лә ҡамасауларға тейеш түгел».

«Дейли компас» Я. А. Маликтең тәҡдимен ҡабул итеүгә икеләнеүселәрҙе тәнҡитләп сығыш яһай.

«Нью-Йорк таймс» газетаһының күҙәтеүсеһе Болдуин, АҠШ-тың ҡарашынса һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатыу маҡсатҡа ярашлы, тип иҫәпләй.

Индонезия Американың Кореялағы авантюраһында ҡатнашыуҙан баш тарта

ГААГА, 27 июнь. (ТАСС). Анета агентствоһының тапшырыуына ҡарағанда, АҠШ-тың ныҡышмалы талап итеүенә яуап рәүешендә Индонезияның сит ил эштәре министрлығы генеральный секретары Дармасетиавани, Индонезия Кореялағы һуғышҡа ҡатнашыу өсөн үҙенең ҡоралы көстәрен ебәрмәйәсәк, тип белдергән.

АҠШ Ирандың эштәренә тығылыуҙы дауам иттерә

Яңы баҫым

ВАШИНГТОН, 28 июнь. (ТАСС). Государство департаменте АҠШ-тың государство секретаре Ачесондың белдереүен иғлан итте, был белдереүендә ул Ирандың нефть промышленносен национализациялауға ҡағыла. Ачесон, Иран үҙенең хәҙерге хәрәкәттәрен ҡайтанан ҡарар тип «ышаныс» белдерә. Шул уҡ ваҡытта Ачесон Ирандың «хәҙерге ҡурсының ҡурҡыныслы булыуын» күрһәтә.

Болгария халыҡ республикаһында

Болгария халҡын фашистик ҡоллоҡтан азат итеүсе Совет Армияһы хөрмәтенә Софияла монумент төҙөү билдәләнде.

Хөкүмәт комиссияһы Димитров премияһы лауреаты Данко Митров етәкселегендәге художниктәр һәм архитекторҙар тарафынан эшләнгән проектты ҡабул итте. Монументтең бейеклеге 27 метр. Уны Софияның үҙәк өлөшө — «Септемврийче» паркына урынлаштырыу күҙҙә тотола.

Һүрәттә: азат итеүсе Совет Армияһы монументенең проекты.

ТАСС фотохроникаһы.

Ирандың нефть промышленносен национализациялауға ҡарата

ТЕГЕРАН, 28 июнь. (ТАСС). «Бесуе Аянде» газетаһы баш мәҡәләһендә, Иран халҡы элекке Англия-Иран нефть компанияһының ҡарамағынан бөтә нефть предприятиеләрен тулыһынса тартып алыуҙы талап итә, тип яҙа.

Газета күрһәтеүенсә, Иран хөкүмәте империалистарҙың янауҙарына һәм баҫымдарына уңышлы ҡаршылыҡ күрһәтеүе өсөн булған бөтә эске һәм тышҡы мөмкинлектәрҙе файҙаланырға тейеш. Англия империалистәре, тип билдәләй газета, Ирандың нефть промышленносен тулыһынса национализациялауҙы ғәмәлгә ашырыуға ҡамасаулау өсөн баҫым яһау һәм янауҙарҙың бөтә төрҙәрен ҡулланалар. Улар танкерҙарҙың капитандарына нефть продукттары йөктәрен алыу тураһында ҡултамға бирмәҫкә бойоралар, сит ил специалистәренең коллектив рәүештә эштән сығыуҙары менән янайҙар.

«Бесуе Аянде», Иран хөкүмәте, империалистарҙың эҙләнеүҙәренә серьез һәм лайыҡлы отпор биреү өсөн, киң общественносҡа таянырға тейеш, тип иҫәпләй. «Бөтә был янауҙарҙы юҡҡа сығарыу һәм баҫым яһауға ҡаршылыҡ күрһәтеү өсөн иң яҡшы ысул, — тип яҙа газета, — империалистарҙы ғәмәлгә ашырылған фактар алдына ҡуйырлыҡ йылдам һәм ҡыйыу хәрәкәттәр яһауҙан тора. Тәжрибә шуны күрһәтә, хөкүмәттең нефть продукттарын ил эсендә бүлеү һәм һатыу буйынса, шулай уҡ тейешле доходтарҙы туранан-тура Иран милли нефть компанияһының ваҡытлы правление тарафынан алыныуы буйынса саралары байтаҡ дәрәжәлә илебеҙ ниган финанс түшиген бөтөрөүгә юл астылар».

«Бесуе Аянде» газетаһы Иран хөкүмәтенә, шулай уҡ, империалистик державаларҙың хәрәкәттәренә ҡаршы, уларҙың Ирандың эске эштәренә тығылыуҙарына һәм Ирандың нефть промышленносен национализациялауҙы үткәреүгә маташыуҙарына ҡаршы тағы ла ҡыйыуыраҡ протест белдерергә кәңәш бирә. Атап әйткәндә, «Бесуе Аянде» Гаагалағы Халыҡ-ара судтың «килештереүҙә ҡатнашыуын» кире ҡағып, Англияның ҡылығына һәм хәрәкәттәренә БМО-ға жалоба биреүҙе кәрәк тип иҫәпләй.

Көнбайыш державалар халыҡ-ара килешеүҙәрҙе боҙоп, герман армияһын ҡайтанан аяҡҡа баҫтыралар

ЛОНДОН, 27 июнь. (ТАСС). «Дейли телеграф энд морнинг пост» газетаһы көнбайыш державаларҙың хәрби пландарында Көнбайыш Германияның ҡатнашыуы тураһында үҙенең дипломатик күҙәтсеһенең мәҡәләһен баҫып сығарҙы.

«Бик тиҙҙән, — тип яҙа күҙәтсе, — Төньяҡ Атлантик Союзда ҡатнашыусы илдәрҙең сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары комитеты был темаға Германияла өс көнбайыш державаның верховный комиссарҙары тарафынан индереләсәк докладты тикшерәсәк. Был доклад Германия хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә төҙөлгән, ул һөйләшеүҙәр һуңғы биш ай эсендә алып барылдылар. Иҫәп буйынса докладта, генерал Эйзенхауэр етәкселегендәге ҡоралды көстәр составына инергә тейеш булған Германияның контингенте 150—200 мең кеше тәшкил итәсәк. Ошо һанға тактик авиация өсөн һәм еңел хәрбилиңеҙ көстәре өсөн личный состав та инә.

Был доклад, моғайын, көнбайыш державалар араһында оҙаҡ һөйләшеүҙәр алып барыуға килтерер һәм ихтимал, ҡайһы бер фекер айырымлыҡтары тыуҙырыр. Төп фекер айырымлыҡтары, ихтимал, Германия формированиеләренең күләмдәре тураһындағы һәм штатта Германияның вәкиллеге тураһындағы мәсьәлә буйынса тыуыр. Германия хөкүмәте, моғайын, дивизиялар һаны кәмендә 12 мең кешенән дә аҙ булмаһын, тип ныҡлап талап иткәндер, ә штаттағы вәкиллеккә килгәндә, иһә ул, «тулыһынса бер тиңлелек» булыу хоҡуғын яҡлай».

БМО-лағы Совет вәк[илы] Я. А. Маликтең сығышына сит илдә[рҙә] откликтәр

ҠЫТАЙ ХАЛЫҠ РЕСПУБЛИКАҺЫ

ПЕКИН, 28 июнь. (ТАСС). Со[вет] Союзының БМО-лағы вәкиле Я. [А. Ма]ликтең 23 июндә радио аша сы[ғышына], атап әйткәндә, уның [Корея] мәсьәләһенә ҡағылған өлөшенә [баһа]лар биреп, «Гунженьжибао» [газетаһы] былай тип яҙа: «Беҙ, ҡытайлы[лар, Ма]ликтең тәҡдименә тулыһынса [ҡушылабыҙ.] Беҙ һәр ваҡыт Корея мәсьәләһе[н тыныс] юлға һалыу яғында торҙоҡ. Иҫ[кә тө]шөрәп үтәбеҙ: Кореяла һуғыш [башланғас] уҡ, әле үткән йылдың 20 авгу[стында] Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең сит ил [эштәре] министры Чжоу Энь-лай БМО-ның [Хәүефһеҙ]лек Советына телеграмма ебәр[ҙе,] унда Советтар Союзының Корея [мәсьәлә]һен тыныс юл менән яйға һалыу [тура]һындағы тәҡдимен яҡланы.

Факттар, тип яҙа артабан газета, [...]тың Ҡытайға бәреп инергә ҡара[рҙа]рҙарын күрһәттеләр, быға юл ҡуйм[а]йбыҙ Америка агрессияһына ҡарш[ы тор]шоу. Кореяға ярҙам күрһәтеп [...] Тыуған илебеҙҙе яҡлау өсөн [...] башларға мәжбүр булдыҡ, ә Ҡытай [добро]волецтәре, Корея Халыҡ армияһы [менән] ҡулға-ҡул тотоношоп Америка а[грессор]ҙарына ҡаршы көрәшеү өсөн, [...] йылғаһын аша сыҡтылар.

Корея Халыҡ армияһы һәм Ҡытай [до]броволецтәре Америка агрессорҙары[ның Ко]рея фронтында еңергәс улар [...] ләкин Америка агрессорҙары был[ай ...] йешле һабаҡ алманылар һәм, [...] агрессив һуғыштарын киңәйтеү[...] ниәттәрен ташламайҙар, күрәһең».

ГЕРМАНИЯ ДЕМОКРАТИК РЕСПУБЛИКАҺЫ

БЕРЛИН, 28 июнь. (ТАСС). «Бер[лине] Цейтунг» газетаһы 27 июнгә [...] Я. А. Маликтең сығышына арна[лған] мәҡәләһендә, был тәҡдим бөтә ил[дәрҙең] тынысылыҡ һөйөүсе кешеләрен[...] иҫәптән немец халҡында ла [...]лау тапты, тип яҙа.

АҠШ

НЬЮ-ЙОРК, 28 июнь. (ТАСС). [...] пресс агентствоһы хәбәрсеһе[нең ...] реүенә ҡарағанда, генеральный [ас]сессияһының председателе Энтезам [...] селәргә, ул Я. А. Маликтең тәҡди[ме Ко]рея һуғышын бөтөрөүгә килтерер [...] «ҙур өмөт» тотоуы тураһында бел[дергән].

«Нью-Йорк таймс» хәбәрсеһе [...]тондың һүҙҙәренә ҡарағанда, БМ[О ...]гаттарының күпселеге «Совет т[әҡдимен] ентекләп өйрәнергә тейеш, [...]ышана».

«Джорнел оф коммерс» газетаһ[ы Ко]реялағы конфликтте туҡтатыу АҠ[Ш] конгресен мобилизация һәм ҡорал[ланыу] программаһын оҙағыраҡ осорға [...] мәжбүр итә алыр ине, ә был тә[...]ҙың кәмеүен аңлатыр ине һәм [...]ғы бер йәки ике йыл эсендә эш [...]генең байтаҡ түбән төшеүенә [...] килеүенән» ҡурҡыуҙы тыуҙыр[а,] тип билдәләй.

Ләкин, официаль ҡругтарҙың [...]ҙарына һәм һаҡлыҡтарына ҡарама[ҫтан,] Маликтең тәҡдиме хатта хөкүмәт [про]граммаһын ғәҙәттә яҡлаусы [...] консерватив элементтарҙа ла киң [яҡ]лык таба. Ассошиэйтед пресс аген[тство]һының Вашингтондағы хәбәрсеһе[нең бел]дереүенә ҡарағанда, сит ил эште[ре бу]йынса сенат комиссияһының председа[те]ле Коннэли хәбәрселәргә, «Маликтең т[әҡ]диме ентекләп ҡарарға» кәрәк, тип [бел]дергән.

«Дейли компас» үҙенең редакци[он мә]ҡәләһендә Маликтең тәҡдиме[н ...] кисектермәйенсә ҡабул итергә сақыр[а.] «Маликтең үткән аҙна аҙағында [...] тәҡдименә бер генә мөнәсәбәт — бө[тә] тынысылыҡҡа өлгәшеүгә береүе[...]тигән мөнәсәбәт кенә йәшәргә тейе[ш.] тәҡдимде ҡабул итергә кәрәк».

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРО[В]

БЕЛДЕРЕҮ

1951 йылдың 1 июлендә Өфө аэ[родро]мында (Глумилино) СССР һауа [Флоты] Көнө байрам ителәсәк. Митинг һә[м ...]нынан бөтә халыҡ гуляниеһе була.

Аэродромға 2-се, 3-сө номерлы трам[вай]ҙарҙа һәм автобустарҙа барырға мөмк[ин.]

Байрам итеү иртәнге 10 сәғәтт[ә баш]лана.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында — Луначар[ский] исемендәге баҡсала — «АННА [КАРЕ]НИНА».

Кис 8 сәғәт 30 минутта башл[ана.]

«Октябрьҙа» — «ҠОРОС ҺАЛЫ[...]».

«Салауатта» — иртән «Р[...] СЕКРЕТАРЕ», кис «СЕБЕР ЕРЕ [ТУРА]ҺЫНДА ХИКӘЯ».

Матросов исемендәге кинотеатр[ҙа] көндөҙ «БОҘ ӨҪТӨНДӘ ИҘ», ки[с ...] ШЕНЬКА».

Октябрьскийҙан хаттар

5. Дан

Ричард Аллаяровтың исемен бер нисә йыл буйына Почет таҡталарында, ҡала һәм өлкә газеталары биттәрендә күрергә мөмкин ине. Был исемде комсомолдың пленумдарында һәм төрлө ойошма йыйылыштарында хөрмәт менән әйтәләр ине. Һәм күптәр өсөн бер ҙә көтөлмәгәндә генә төрлө ойошма тарафынан Аллаяровтың комсомолдан сығарылғаны билдәле булды.

Нимә булды һуң?

Ошо очеркта юғалтылған һәм кире ҡайтарылған дан тураһында, дисциплинаның ҙур әһәмиәте тураһында, үҙеңде культуралы тота белеү тураһында... һөйләнәсәк.

Ричард Совет илендә, бәхетле осорҙа тыуып үҫте. Ул, кино экрандарын һәм театр сәхнәләрен иҫкә алмағанда, жандармдарҙы, купецтәрҙе, помещиктарҙы күҙ алдына ла килтерә алмай. Балалар баҡсаһынан ул мәктәпкә, Ишембай ҡалаһындағы һөнәрселек училищеһынан Туймазыға бораулау конторaһына килде. Уның алдында заводтарҙың һәм уҡыу йорттарының бөтә ишектәре һәр ваҡытта ла асыҡ ине.

Яңы урында йәш эшсе ҙур иғтибар һәм хәстәрлек менән солғап алынды: уға яҡшы квартира бирҙеләр, бораулаусы булып ҡыҙыҡлы эшкә урынлаштылар. Уны бер ваҡытта ла иғтибарһыҙ ҡалдырманылар. 1949 йылдың 24 апрелендә уҡ «Башкирский нефтяник» газетаһы: «Йәш мастер Аллаяровтың бригадаһы айға норма буйынса 700 метр проходка урынына 21 эш көнөндә 760 метр бораулаңы» тип яҙҙы.

Октябрьский ҡалаһының мөнәрләгән газета уҡыусылары 10 июнда «Йәш мастерҙың тәжрибәһе нимәгә өйрәтә?» тигән ҙур мәҡәлә уҡынылар. Унда: «1948 йылдың сентябрь айында йәш бораулаусы Ричард Хәйрулла улы Аллаяров 2-се номерлы бораулау конторaһына мастер итеп үрләтелде. Уға әле 23 йәш кенә... Контора етәкселәре эшкә үрләтеп, уны үҫә торған, һәләтле бораулаусы, тип иҫәпләнеләр, уның һәләтлегенә ышандылар», тип яҙылғайны.

17 июлдә ВЛКСМ-дың ҡала комитеты секретары комсомолдың ҡала йыйылышында Аллаяровтың хеҙмәттәге уңыштарын билдәләп үтте. 19 октябрҙә ҡала газетаһы яңынан йәш мастерҙың уңыштары тураһында яҙҙы. 1950 йылдың 6 ғинуарында Аллаяров алдынғы бораулау мастерҙәре йыйылышында сығыш яһаны, 8 ғинуарҙа урындағы газетаны уҡыусылар уның тураһында яңы мәғлүмәттәр белделәр... 16 июлдә газета тағы ла Ричард тураһында мәҡәлә баҫып сығарҙы.

Ричард маҡтау һүҙҙәрен, яғымлы теләмдәрҙе тыңларға өйрәнеп китте. Уны бер кем дә тәнҡитләмәне һәм, ни өсөндөр, егет буровойҙа яҡшы эшләй икән, шул еткән, ә ҡалғандарҙың бөтәһе лә икенсе дәрәжәләге эштәр, тип уйланы...

Йәш мастер бынан үҙенсә һөҙөмтә яһаны. Ул комсомолецҡа хас булмаған эштәр эшләй башланы. Ҡалала уның тураһында яманлап йыш-йыш ҡына һөйләй башланылар.

Ләкин комсомолдың ҡала комитеты ла, бораулау конторaһы ла үҙ ваҡытында тейешле һығымта яһаманылар. Улар уның производство уңышлыҡтарын үлсәүһеҙ маҡтап, уның етешһеҙлектәре алдында күҙ йомоп, йәш кешене бер яҡлы ғына «тәрбиәләүҙе» дауам иттерҙеләр. Һәм көндәрҙең береһендә эш былай булып тамамланды: Ричард өс ай буйына членлыҡ взностарын түләмәгәнлеге өсөн комсомолдан сығарылды...

«Аллаяров эше» бына ошолай килеп сыҡты. Әгәр ошо факт менән тәрән ҡыҙыҡһынһаң, ул уйланырға мәжбүр итә. Аллаяровтың эше менән танышҡандан һуң, иркле-иркһеҙҙән Антон Павлович Чеховтың: «Кешенең бөтә нәмәһе лә: йөҙө лә, кейеме лә, күңеле лә һәм фекере лә гүзәл булырға тейеш» тигән һүҙен хәтерләйһең.

Совет йәштәре — коммунизмды актив төҙөүселәр, улар өлкән быуындың эшен дауам итеүселәр һәм уларҙы алыштырыусы. Бөйөк Сталиндең тоғролоҡло шәкерте һәм соратниге иптәш А. Жданов «Звезда» һәм «Ленинград» журналдары тураһында һөйләгән докладында былай тигәйне: «...Йәш быуынды түҙемле, шат күңелле, ҡыйынлыҡтарҙан ҡурҡмаусан, был ҡыйынлыҡтарға ҡаршы барыусы һәм уларҙы еңә белеүсе итеп тәрбиәләргә кәрәк. Беҙҙең кешеләребеҙ белемле, юғары культуралы, мораль яҡтан талапсан һәм зауыҡлы юғары идеялы кешеләр булырға тейештәр».

Аллаяров комсомол Уставын боҙҙо, үҙенең дисциплинаһыҙлығын, үҙен культуралы итеп тота белмәүен күрһәтте. Уны тикшергән йыйылышта иптәштәре уға былай тинеләр:

— Һин комсомол алдында үҙеңдең яуаплылығыңды, коммунизм төҙөүсе сифатында тормоштағы үҙеңдең юғары ролеңде онотҡон.

Икенселәре:

— Комсомол Уставы алдында уның бөтә членлары ла тиң, һәм уның параграфтары бөтәбеҙ өсөн дә иҫәге, тинеләр.

— Аллаяров үҙен генә ярата, унда коллективҡа һәм башҡаларға ҡарата ихтирам етешмәй, тип ҡырҡа әйтеп үттеләр.

Уның общественный урындарҙа тәртип боҙғанлығын хәтергә төшөрҙөләр, уның ияғына ҡаршы сараларҙы боҙғанлығы тураһында миҫалдар килтерҙеләр...

«Аллаяров эше» иғтибар менән тикшерелгәндән һуң, ВЛКСМ-дың ҡала комитеты уны комсомол сафына ҡайтарыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Ләкин бының менән генә уның тураһында хәстәрлек бөтәме һуң әле?

...Тыныс аҡҡан көмөш кеүек, Ыҡ йылғаһы артында, Тәрмәнтау ҡаршыһында, йәшел туғайлыҡта бейек бер вышка тора. Бында, 705-се буровойҙа Ричард Аллаяров етәкселегендәге комсомолец-йәштәр бригадаһы эшләй. Ул быйыл да яҡшы һөҙөмтәләр биреп эшләгән 474-се буровойҙан килде. Ул план буйынса станок-айға 561 метр проходка урынына айға 911 метр бораулаған, 32 меңгә экономия яһаған, 79 мең һум премия, шул иҫәптән Аллаяров үҙе 6375 һум премия алған.

Ләкин 705-се буровой айырым әһәмиәткә эйә ине. Бында бораулауҙың форсировать ителгән режиме ҡуйылды, бригада был методҡа беренсе булып күсте. Быға тиклем ошондай яуаплы заданиене үтәү Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Куприяновтың, данлыҡлы мастер Ҡасим Бәләбәйновтың һәм рекордсы Сидоренко иптәштәрҙең бригадаларына ғына тапшырыла ине...

Бригада бораулауҙы уңышлы башлап ебәрҙе, тәүге 6 көн эсендә ул 516 метр, шул иҫәптән 22 майҙа 180 метр үтеп, ысын рекорд ҡуйҙы.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, комсомол ойошмалары Аллаяровты һәм уны ғына түгел, башҡаларҙы ла систематик тәрбиәләүҙе дауам иттерергә тейештәр! Яҡшы производственник, өлгөлө гражданин да булырға тейеш. Аллаяров инде бөтә коллектив тарафынан тикшерелгәнлектән, серьез мәктәп аша үткән булырға тейеш ине. Ләкин ул, беҙҙеңсә, тейешле һығымта һәм һабаҡ яһамаған. «Политик уҡыу нисек бара?» — тип һорағас, ул ғәмһеҙ генә: «Бөтә ҡыш буйына бораулау мастерҙәре мәктәбендә йөрөнөм, күп тема үттек, ләкин уларҙың бөтәһен дә хәтерҙә тотоп буламы ни?» тип яуап бирә. Һәм бына тағы уның тураһында ул художестволы әҫәрҙәрҙе аҙ уҡый, тип һөйләйҙәр...

Ричард Аллаяровты ныҡлап уҡытырға һәм тәрбиәләргә кәрәк. Уның тураһында уйлағанда Максим Горькийҙың үҙенең улына яҙған бер хатын тулҡынланыу менән хәтергә төшөрәһең. Бөйөк яҙыусы йәш кешегә ҡарата юғары талаптар ҡуйҙы! «Һин киттең, ә һин ултыртҡан гөлдәр ҡалдылар һәм үҫәләр. Мин уларға ҡарайым һәм миңә минең улым үҙенән һуң Каприҙа ниндәйҙер яҡшы нәмәләр — гөлдәр ҡалдырғанлығы тураһында уйлауы рәхәт. Бына әгәр һин һәр ҡасан һәм бөтә ерҙә, үҙеңдең бөтә ғүмереңдә буйына кешеләр өсөн бары тик яҡшылыҡ — гөлдәр, фекерҙәр, үҙең тураһында данлыҡлы иҫтәлектәр ҡалдырһаң — һинең тормошоң еңел һәм рәхәт булыр ине. Ул ваҡытта һин үҙеңде бөтә кешеләргә кәрәкле, тип хис итер инең һәм был тойғо һине бай рухлы итер ине. Бел, һәр ваҡытта ла алыуға ҡарағанда, биреү рәхәтерәк...»

Горькийҙың һүҙҙәренә өҫтәп әйтеп тороуҙың кәрәге юҡ...

Әнүәр Бикчәнтәев.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтселәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

Б02541 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25000

ЙӘШӘҺЕН БӨЙӨК СОВЕТ СОЦИАЛИСТИК РЕСПУБЛИКАЛАР СОЮЗЫ—БЕҘҘЕҢ ИЛЕБЕҘ ХАЛКТАР ДУҪЛЫҒЫНЫҢ ҺӘМ ДАНЫНЫҢ ТАЯНЫСЫ, БӨТӘ ДОНЪЯЛА ТЫНЫСЛЫКТЫҢ КАКШАМАҪ ТЕРӘГ

(ВКП(б) Үҙәк Комитеты саҡырыуҙарынан)

Мәскәү тауышы

Яҙғы иртә...
Тәҙрәләрҙе иркен асып,
Мин ҡояшҡа ҡарап торғанда,
Мәскәү тауышы менән күмелделәр
Барлыҡ майҙан, барлыҡ урамдар,
Һәр көн шулай:
Мәскәү беҙҙе,
Өсә кеүек, һөйөп уята,
Сәләм һүҙе, шатлыҡ музыкаһы
Яҡты ҡанат йәйә ян-яҡта...
Һәм был аваз
Тынмай яңғырап тора
Тауҙа, Иҙел ярында,
Станок, вышка янында,
Мәскәү һүҙе —
Халыҡ һүҙе булып,
Йәшәй һәр кем аңында.
Беҙ Май сәскәләре араһынан
Атлап үткән саҡта байрамда,
Үткән саҡта тығыҙ сафтар булып
Өфө буйлап йәшел урамдан,
Сәскән саҡта ерҙә яҡтылыҡты,
Күре бороп һыуҙар ағышын,
Беҙҙең аҡылдарҙа яңғырап торҙо
Мәскәү һүҙе, Мәскәү тауышы.
Атакалар уты әсендә лә,
Еңел ауыр туптар атышын,
Алға саҡырып, күкрәп барҙы
Данлы Мәскәү тауышы.
Һәм был тауыш бөгөн
Бар илдәрҙә
Яҡты өмөт утын яндыра,
Һәм ул
Трумэн ерөүен ҡаплап,
Биш материк буйлап,
Донъя киңлегендә яңғырай.
Мәскәү хәбәр итә бар илдәргә
Тыныслыҡтың еңеү юлдарын, —
Океан аша килгән танкыларҙы
Диңгеҙ төптәренә атып ташлай
Һөйәлләнгән докер ҡулдары.
Һәм үтмәһен өсөн
Пушка тейәп килгән состав,
[illegible]
Тимер юлға ята Раймонда Дьен,
Француз ҡатыны...
[illegible]
[illegible] — бәхет тауышы
Оса алыс илдәргә,
Мәскәү һүҙе — йөрәктәргә,
Мәскәү исеме — телдәргә.
Ошо тауыш яңғырап тора
Ватанда һәм
Сена ярында,
Мәскәү һүҙе,
Сталин һүҙе булып,
Йәшәй халыктар аңында.

Хәниф Кәрим.

Май йыры

Хөшш Май,
йәҙгә нурҙар уйнаҡ,
Күңел дәртле,
йөрәк шатлана;
Азат ерҙә,
беҙ йәшәгән илдә,
Бөтән байрам —
уртаҡ тантана.
Зур кинәнес менән колхозала
[illegible]
(Бер әсәнән тыуған бала кеүек
Бер-береһенә яҡын тойҙы).
Тыуыр көнгә,
бергә,
һаман үргә,
Юл ярабыҙ яҡты еңеүгә.
Ҡайнар хисте, кесте, иҗад, эште
Ҡушып коммунизм төҙеүгә.

А. Игебаев.

Социалистик ярыш башында

Ленин районы хеҙмәтсәндәре Өфө ҡалаһы предприятиелары араһында Май алды социалистик ярышын башлап ебәргәндәр ине. Ярыш уларға гүзәл һөҙөмтәләр бирҙе. Район хеҙмәтсәндәре, үҙҙәренең көсөргәнешле хеҙмәттәре менән ҡалала алдынғылыҡты яулап алып, демонстрация колонналарының башында барыу бәхетенә өлгәштеләр.

Социалистик ярышты беҙҙең районда электр оборудованиелары заводының коллективы башлап ебәрҙе. Улар, үҙ мөмкинлектәрен, эске ресурстарын иҫәпләп, техниканы яҡшы файҙаланыу, продукция етештереүҙе арттырыу, уның сифатын яҡшыртыу буйынса күтәренке йөкләмәләр алғайнылар. Партияның район комитеты был алдынғы коллективтең инициативаһын хуплап, предприятиеларҙең эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре араһында социалистик ярышты киң йәйелдереү өсөн политик-массовый эште йәйелдереп ебәрҙе. Партияның тәүге ойошмалары агитацион-массовый эштең төрлө формаларын һәм ынғай тәжрибәләрҙе ҡулландылар. Һөҙөмтәлә районың башҡа предприятиеларында ла был инициатива ҙур хуплау тапты. Предприятие коллективтары алынған социалистик йөкләмәләрҙе срогынан алда арттырып үтәү өсөн ярышҡа ҡушылдылар.

Был социалистик ярышта коммунистар һәм комсомолецтар алдынғы сафта барҙылар. Бик күп коммунистар, мәҫәлән, судноларҙы ремонтлау заводынан котельщик иптәш Шеломенцев, токарь Мыльников һәм башҡа иптәштәр Май алды социалистик ярышында көндәлек нормаларын 230—250 процентҡа үтәнеләр. Был ярышта бигерәк тә электр оборудованиелары, аҙыу машиналары заводтары, аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһы һәм башҡа предприятиелар ҙур уңыштарға өлгәштеләр.

Район партия ойошмаһы, хеҙмәтсәндәр араһында агитацион-массовый эште киң йәйелдереү нигеҙендә, үҙ эшендә ҙур уңыштарға иреште. Райондың промышленносе валовой продукция етештереү буйынса I квартал планын 108,9 процентҡа үтәне. 6 апрель айында валовой продукция етештереү буйынса план үтәлеше 113,3 процент тәшкил итте.

Һуңғы 4 ай эсендә райондың бөтә предприятиелары ла ритмлы һәм рентабелле эшләнеләр. Быйыл улар хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм уның сифатын артабан яҡшыртыу буйынса үҙ эштәрен байтаҡ яҡшырттылар. 1951 йылдың I кварталында, үткән йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда, валовой продукция етештереү 18 процент артыҡ тәшкил итте.

Социалистик ярышта өлгәшелгән был уңыштар беҙҙең районға ВКП(б) ҡала комитетының һәм ҡала Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алыуға мөмкинлек бирҙеләр. Беҙгә, Ленин районы хеҙмәтсәндәренә, Май демонстрацияһын башлап ебәрергә рөхсәт ителде.

Уңыштар, әлбиттә, бушҡа килмәнеләр. Улар район хеҙмәтсәндәренең фиҙакәр хеҙмәт һөҙөмтәләре булып торалар. Беҙҙең райондың предприятие коллективтары өлгәшелгән уңыштарҙы ныҡытыу буйынса партияның тәүге ойошмалары етәкселегендә киләсәктә лә намыҫлы эшләйәсәктәр. Улар, оборудованиеларҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланып, инструменттарға, материалдарға, сырьеға һәм ҡыулыҡҡа экономия яһап, хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреп, 1951 йылдың производство программаһын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыштың байрағын тағы ла юғарыраҡ күтәрерҙәр һәм хөкүмәтебеҙ, партиябыҙ биргән планды намыҫлы үтәрҙәр.

Г. Вәлиев,
ВКП(б)-ның Ленин райкомы секретаре.

Тыуған ил көүәтен үҫтереүҙә

Илебеҙҙең социалистик промышленносе өҙлөкһөҙ үҫә. Ул етештергән продукцияның сифаты ла яҡшыра бара. Бындай үҫеш һәр бер промышленность работнигенә ҡаты талаптар ҡуя. Мастерҙарға был айырыуса ныҡ ҡуйыла. Сенки мастер ул цехта үҙәк фигура булып тора. Уның эшмәкәрлегенә сменаның, бригаданың һәм цехтың уңышы бәйләнгән.

Миҫал өсөн Черниковск 1-се Май исемендәге шырпы фабрикаһының автомат-[illegible] цехын алып ҡарайыҡ. Мин унда смена мастеры булып эшләйем. Цех мастерҙарының [illegible] хеҙмәте арҡаһында эш йылдан-йыл яҡшыра бара. 1949 йылда шырпы ҡаптарының сифаты 4 процент төшкән ине. [illegible] һәм отличие сифатлы продукция биреүсе бик күп стахановсылар үҫеп сыҡтылар. Романова, Гәрәев иптәштәрҙең бригадалары әлек 110 — 115 процент норма үтәлеше бирһәләр, хәҙер улар заданиеларен 127 процентҡа үтәйҙәр. Шулай уҡ продукцияның сифаты ла бик ныҡ күтәрелде.

Мастерҙарҙың эшселәргә яҡындан тороп ярҙам итеүе цехта рационализаторҙар һанын байтаҡҡа күтәрҙе. Механик Ноженко һәм бригадир Пенкин иптәштәр үткән йылда 20 рационализаторлыҡ тәкдиме индерҙеләр. Һөҙөмтәлә государствоға бик күп экономия бирелде.

Хәҙер сменала инженер Ковалев методы буйынса стахановсыларҙың эш алымдарын өйрәнеү [illegible]. Был тәңгәлдә лә мастерҙарҙың роле зур. Беҙ бөтә стахановсыларҙың ла эштәренә хронометраж күҙәтеү үткәрҙек. Күҙәтеү һөҙөмтәһендә күп кенә етешһеҙлектәр асыҡланы. Беҙ иң яҡшы эш алымдарын һайлап алдыҡ. Эшселәр һайлап алынған алымдарҙы өйрәнделәр. Һөҙөмтә, әлбиттә, бик яҡшы.

Мин мастер булыуым сифатында, эшкә килгәс, һәр бер оборудованиеның сифатын тикшерәм. Был минең ғәҙәтемә инган. Ярым фабрикаттарҙы ла тикшереп сығам һәм эшсе көстәрен дөрөҫ бүләм. Бөтә был саралар сменаның хеҙмәтен артабан яҡшырталар.

Мин етәкселек иткән смена — хәҙер фабрикала алдынғыларҙың береһе. Шырпы ҡаптарын [illegible] процент төшкән итмәй. Уны 1,7—2 процентҡа тиклем кәметтек. [illegible]

Стахановсылар хәҙер фабрика күләмендә лә күп. Улар Май алды ярышында фабриканың тағы ла яҡшыраҡ эшләүенә өлгәшәләр.

Х. Чаньшев, [illegible]



Белорет металлургия заводының коллективы, Май алды социалистик ярышын йәйелдереп, ҙур уңыштарға өлгәште. Завод һөйөклө Тыуған илгә пландан тыш суйын, ҡорос һәм прокат бирҙе.

Һүрәттә: (һулдан уңға) заводтың күренекле сталевары Хәсән Шәрәфетдинов, желобщик Ғәбәйҙулла Фәтҡулов, маҡтаулы сталевар скоростник Иван Зимин, ярҙамсы эшсе Ишмулда Муллағәләмов иптәштәр. Уларҙың бөтәһе лә 1 Май көнөн пландан тыш ҡорос биреп ҡаршыланы.

П. Петров фотоһы.

Сталинсе хәстәрлек

Хәҙерге Черниковск ҡалаһы урынында [illegible] булған. Кеше үтә алмаҫлыҡ һаҙлыҡ һәм урмандар аша [illegible] тимер юл ғына һуҙылып ятҡан. [illegible] Черниковка разъезы [illegible]. Былар әле күптән түгел хәтерҙә.

Бына шул урында хәҙер [illegible] ҡаланың киң урамдары [illegible].

Большевиктар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең кешеләр тураһында [illegible] Черниковск хеҙмәтсәндәренең культура-тормош [illegible]. [illegible] торлаҡ йорттар, мәктәптәр, клуб, кинотеатр, дауалау һәм балалар учреждениелары [illegible]. [illegible] урамдары [illegible].

Ҡалала 16 клуб, 25 мәктәп, 112 ҡыҙыл мөйөш, 16 библиотека бар. Дауалау һәм сауҙа учреждениеларының селтәре [illegible]. Ҡала транспортының эше байтаҡ яҡшырҙы. 1949 йылда [illegible] автобус [illegible]. Хәҙер уларҙың һаны [illegible] артты.

Үткән йылда ғына ҡала хеҙмәтсәндәре өсөн 58 мең квадрат метр яңы торлаҡ майҙандары төҙәлеп, эксплуатацияға тапшырылды, дүрт яңы мәктәп, [illegible] балалар баҡсаһы, ясле һәм башҡа коммуналь-торлаҡ биналары һалынды. 148 мең квадрат метр яңы юлдар төҙәлде, 28 мең 500 квадрат метр тротуарға асфальт түшәлде. Унар меңләгән квадрат метр юл һәм тротуарҙар ремонтланды.

Ҡаланы матурлауҙы һәм [illegible] буйынса быйыл ла бик ҙур эштәр [illegible]. Ҡала Советының ошо йылдың 6 февралендә булған сессияһы [illegible].

Быйыл 55 мең 500 квадрат метр [illegible]. Торлаҡтарға капиталь һәм ағымдағы ремонт [illegible] 12 миллион һум [illegible]. 66 мең 500 квадрат метр [illegible].

Тимер юлдың Үҙәк магистраленән [illegible] трамвай [illegible] Черниковка станцияһы [illegible].

Хәҙер күпселек предприятиеларҙа [illegible] урамдарҙы [illegible] тротуарҙарҙы асфальт [illegible].

[illegible] депутаттар [illegible].

Ф. Ғәйнетдинов,
хеҙмәтсәндәр депутаттарының Черниковск ҡала Советы исполкомы председателе урынбаҫары.

Тыныс төҙәлеш көрәшендә

«Ишембайнефть» тресының бөтә предприятиелары ла [illegible] Май алды социалистик ярышында алынған йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәйҙәр. Нефть һәм газ сығарыуҙың 4 айлыҡ программаһын 28 апрелдә үк тамамланылар.

Беренсе Май [illegible] промыселдарҙың коллективтары [illegible]. [illegible] скважиналар фонды оптималь режимда эшләй. Нефть сығарыуҙы арттырыу буйынса [illegible] техниканың киң ҡулланылыу нигеҙендә [illegible] Тыуған илебеҙгә пландан тыш [illegible] нефть сығарылды. Был маҡсат менән беренсе промысел коллективе скважиналарҙың эксплуатацияла коэффициентын 0,98-гә еткерҙе. Нефтте [illegible] был 8 процентҡа [illegible].

[illegible]

Беренсе Май хөрмәтенә йәйелдерелгән социалистик ярыш [illegible] бораулаусылар [illegible] апрель планын [illegible] 17 апрелдә үк [illegible]. [illegible] бораулаусылары 64-се номерлы [illegible] скважинаны [illegible].

Ракитин һәм Солдатов иптәштәр [illegible] коллективтары, стахановсы [illegible] производство планын 1,5—2 тапҡыр арттырып үтәнеләр.

А. Саф[illegible]

«Ишембайнефть» тресының [illegible] бүлеге начальнигы.

ЯҢЫ ХЕҘМӘТ КҮТӘРЕЛЕШЕ

Октябрьский ҡалаһы нефтселәре, Беренсе Май хөрмәтенә йәйелдерелгән социалистик ярышта актив ҡатнашып, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең халыҡ-ара байрамын гүзәл хеҙмәт бүләктәре менән ҡаршылайҙар. Май алды социалистик ярышында айырыуса уңыштарға өлгәшкән «Туймазыбурнефть» тресының беренсе номерлы бораулау контораһы коллективе апрель планын срогынан 15 көн алда үтәне. Был конторала эшләүсе мастер Сидоренко иптәш етәкселек иткән бораулау бригадаһы коллективе, тәүге тапҡыр форсированный ре-[illegible] 137-се номерлы [illegible]. 4-се номерлы промыселдың мастеры [illegible] [illegible] гел, бәлки «Туймазынефть» тресының беренсе булып апрель планын срогынан алда үтәне. Ул коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре фондына пландан тыш [illegible] биреү өсөн көрәшә.

Ю. Әхм[illegible]
(Үҙ хәбәрсебеҙ)

ХЕҘМӘТСӘНДӘРҘЕҢ ХАЛЫК-АРА СОЛИДАРЛЫҒЫ—ТЫНЫСЛЫКТЫ ҺАҠЛАП АЛЫП ҠАЛЫУҘЫҢ МӨҺИМ ШАРТЫ

Донъяның бөтә илдәренең хеҙмәт кешеләре Беренсе Май көнөн алтмыш икенсе тапҡыр байрам итәләр. Тыныслыҡ һәм демократия көстәренең был боевой смотр көнө бер ваҡытта ла, беҙҙең көндәрҙәге кеүек, ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булып тормағайны. Хәҙерге халыҡ-ара обстановка хеҙмәтсәндәр солидарлығының һәр көн һайын ныҡыуын һәм үҫеүен талап итә, сөнки ул кешелек донъяһының дошмандарына — Англия-Американың яңы бөтә донъя һуғышы тоҡандырыусыларына ҡаршы тороусы бөйөк тыныслыҡ лагеренең ҡаҡшамаҫ нигеҙе булып тора. Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре, үҙҙәренең тыныслыҡ эше өсөн, үҙ балаларының бәхете өсөн, цивилизацияның яҙмышы өсөн яуаплылыҡтарын аңлаған хәлдә, яңы бөтә донъя һуғышына юл ҡуймауға үҙ ихтыярҙарын һәм баҙнатлылыҡтарын 1 Май көнөндә яңы көс менән белдерәсәктәр.

Хәҙерге замандағы донъя обстановкаһын нигеҙҙә ике черта: беренсенән, бөйөк социалистик державаның һоҡланғыс сәскә атыуы, халыҡ демократияһы илдәренең йылдам күтәрелеүе, тыныслыҡтың бөтә донъя лагере көстәренең үҫеүе; икенсенән, АҠШ илара иптәүселәренең һәм уларҙың сателлиттәренең агрессив политикаларының тәрән кризисе, империализмдең бөтә ҡаршылыҡтарының ҡырҡыулашыуы, Төньяҡ-атлантик блок лагерендә эске талаштың көсәйеүе характерлай.

Беҙҙең ҡеүәтле Тыуған илебеҙ Беренсе Май байрамына яңы тарихи еңеүҙәр менән килә. Дүртенсе биш йыллыҡ план уңышлы рәүештә үтәлде һәм арттырып үтәлде.

Большевиктар партияһы етәкселегендә, бөтә илдәр хеҙмәтсәндәренең гениаль уҡытыусыһы һәм юлбашсыһы иптәш Сталин юлбашсылығында совет халҡы һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллыҡты халыҡ хужалығының һәм культураның бөтә тармаҡтарында ла яңы күренекле уңыштар менән билдәләне, хеҙмәт энтузиазмының, ижади инициативаның, ялҡынлы социалистик патриотизмдең яңы гүзәл өлгөләрен күрһәтте.

Илдең халыҡ хужалығы һәм совет кешеләренең етеш көн-күреше яңы, тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелде. Промышленноста биш йыллыҡ план срогынан алда — дүрт йыл да өс айҙа үтәлде.

Ауыл хужалығында биш йыллыҡты үтәү колхоз һәм совхоз производствоһының бөтә тармаҡтарының ҡеүәтле күтәрелеү билдәһе аҫтында барҙы.

Илдең экономикаһын дөйөм күтәреү базаһында халыҡтың етеш көн-күрешенең өҙлөкһөҙ үҫеүе совет общеһтвоһы үҫешенең законы булып тора. Һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллыҡтың йомғаҡтары был законды гүзәл раҫлау булып хеҙмәт итә.

1950 йылда милли доход, 1940 йылға сағыштырғанда, план менән билдәләнгәнсе 38 процентҡа түгел, ә 64 процентҡа артты. 1950 йылда бөтә милли доходтың 74 проценты хеҙмәтсәндәрҙең личный материаль һәм культура ихтыяжлары ҡәнәғәтләндереүгә тотолдо, ә ҡалған 26 проценты социалистик производствоны киңәйтеү һәм башҡа дөйөм государство һәм общественный ихтыяждар өсөн государствоның, колхоздарҙың һәм кооператив ойошмаларҙың ҡарамағында ҡалды.

Милли доходтың артыуы базаһында совет халҡының етеш көн-күреше үҫте. Аҡса реформаһы үткәрелде. 1951 йылды ла иҫәпләгәндә хаҡтарҙы дүрт тапҡыр арзанайтыу тормошҡа ашырылды. Эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең аҡсалата һәм реаль эш хаҡы һәм крәҫтиәндәрҙең доходтары үҫте. 1950 йылда эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең доходтарының һәм крәҫтиәндәрҙең доходтарының дөйөм суммаһы, 1940 йылға ҡарағанда, сағыштырма хаҡтарҙа, 62 процентҡа үҫте. Советтар Союзында эшһеҙлек юҡ. Социалистик Ватандың граждандары үҙҙәренең киләсәктәренә ышаныс менән ҡарайҙар.

Биш йыллыҡтың уңышлы үтәлеүе совет социалистик хужалыҡ системаһының капиталистик хужалыҡ системаһына ҡарағанда, тыныс социалистик экономиканың АҠШ, Англия, Франция һәм башҡа капиталистик илдәрҙең экономикаһына ҡарағанда өҫтөнлөктәренең күргәҙмәле иллюстрацияһы булып тора.

Америка, Англия, Франция экономикаһының бер яҡлы характерҙа булыуы налогтарҙың һәм хаҡтарҙың ғәйәт ныҡ үҫеүенә, халыҡ массаларының тормош кимәлдәренең артабан түбәнәйеүенә, эске баҙарҙың ҡарҡлыуына алып бара. АҠШ-тың һәм уларҙың сателлиттәренең хәрби экономикаһы АҠШ-та һәм улардан бойондороҡло илдәрҙә яңы экономик кризистең башланыу ҡурҡынысы менән тулы. Киреһенсә, СССР-ҙа тыныс промышленносте күтәреүҙең йылдам темптарының халыҡтың етеш көн-күреше үҫеүенең йылдам темптары менән яраштырып алып барылыуы совет экономикаһының яңы уңыштары өсөн кәрәкле булған бөтә шарттарҙы тыуҙыра.

Социалистик Тыуған илебеҙҙең сәскә атыуы, СССР-ҙың эҙмә-эҙлекле тыныслыҡ политикаһы Советтар Союзына ышаныста булған йөҙәр миллионлаған кешеләрҙең һөйөү һәм бирелгәнлек тойғоларын көсәйтә. Донъяла беренсе социалистик государствоның халыҡ-ара авторитеты һәм популярлығы һәр көн һайын үҫә. Совет кешеләренең коммунизм төҙөү эшендәге уңыштары менән, тыныслыҡ һөйөүсе социалистик державаның экономик ҡеүәтенең үҫеүе менән бөтә донъя халыҡтары үҙҙәренең иң яҡшы уйҙарын, үҙҙәренең тыныслыҡты нығытыуға булған өмөттәрен бәйләйҙәр.

Советтар Союзының туғандарса ярҙамында халыҡ демократияһы илдәре социалистик төҙөлөш юлынан йылдам темптар менән алға баралар. Кешелек донъяһының тарихы государстволар араһында, Советтар Союзы менән халыҡ демократияһы илдәре араһында йәшәп килгән дуҫлыҡ кеүек, тәрән һәм фиҙакәр дуҫлыҡтың булғанын белмәй. Был дуҫлыҡтың характеры күргәҙмәле рәүештә шуны раҫлай: Советтар Союзының тышҡы политикаһы ерлегендә халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең яңы, бығаса күрелмәгән тибы урынлаштырыла, халыҡтарҙың сәскә атыуы тураһында ысын-ысындан хәстәрлек күреү, тыныслыҡты нығытыу өсөн бергәләп көрәшеү уның айырмалы чертаһы булып тора.

Халыҡ демократияһы илдәренең экономикаһында социализм ныҡлы рәүештә урынлаша. Государствоның социалистик секторы бөтә промышленность производствоһының Румынияла, Болгарияла, Албанияла 99 процентын, Чехословакияла—98 процентын, Венгрияла 97 процент самаһын алып тора. Был илдәрҙең тарихында беренсе тапҡыр эшселәр синыфы һәм уның боевой авангарды — коммунистар һәм эшселәр партиялары тирәһенә тупланған халыҡ массаларының ысын берҙәмлеге булдырылған.

Ҡытай Халыҡ Республикаһында тарихи ҡайтанан тыуыу һәм күтәрелеүҙең бөйөк процессы бара. Империализмдең ҡанлы терроры иҙеүе аҫтында йәшәгән иҫке Ҡытай кире ҡайтмаҫлыҡ булып юғалды. Йөҙәр миллионлаған эшселәрҙең, крәҫтиәндәрҙең, интеллигенцияның үҙҙәренең Халыҡ хөкүмәте, данлыҡлы коммунистар партияһы һәм уның юлбашсыһы Мао Цзэ-дун тирәһенә тупланыуы һәр көн һайын көсәйә.

Ҡыҫҡа срок эсендә Ҡытайҙың халыҡ власы илдә ғәйәт ҙур социаль-экономик үҙгәртеп ҡороуҙарҙы тормошҡа ашырҙы. Советтар Союзының тәрән дуҫлығына, бөтә яҡтан яҡлауына һәм әскәрһеҙ ярҙамына таянып, ҡытай халҡы уңышлы рәүештә үҙенең яңы тормошон төҙөй.

Советтар Союзының бөйөк тәжрибәһенә һәм туғандарса ярҙамына таянып, Ҡытайҙың Халыҡ хөкүмәте индустриялаштырыуға курс тота, ул илде ҡеүәтле держаӯаға әйләндерергә теләй.

Дуҫлыҡ, союз һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Совет—Ҡытай договоры, шулай уҡ күп кенә мөһим өҫтәлмә килешеүҙәр йәш Ҡытай Халыҡ Республикаһының халыҡ-ара позицияһын ныҡыттылар.

Ҡытай Халыҡ Республикаһы ойоштороуы менән империалистик ҡол итеүселәргә ҡаршы Азиялағы бөтә халыҡтарҙың азатлыҡ көрәшендә яңы эра башланыуын, СССР менән бергә, уның менән тығыҙ союзда Ҡытай Халыҡ Республикаһының Алыҫ Көнсығышта тыныслыҡты тоғро һәм ныҡлы һаҡлаусы булып тороуын бөтә прогрессив кешелек донъяһы яҡшы аңлай.

Бөтә ер шарында йәшәгән 2,1 [illegible] лиард кешенең дөйөм һанынан Совет[illegible] Союзында, Ҡытай Халыҡ Республика[illegible] да һәм Европаның халыҡ демократ[illegible] илдәрендә 800 миллион кеше йәшә[illegible] мәк, бөтә кешелектең өстән бер[illegible] социализм байрағы аҫтында йәшәй[illegible] иҗад итә. Был бөтә капиталистик [illegible] ҙәге эшселәрҙе, крәҫтиәндәрҙе һәм [illegible] грессив интеллигенцияны, бөтә [illegible] халыҡтарҙы үҙҙәренең тормош [illegible] ры һәм интерестәре өсөн, азатлыҡ [illegible] бойондороҡһоҙлоҡ өсөн, тыныслыҡ [illegible] ныҡытыу өсөн, Америка һуғыш то[illegible] рыусыларының еңәйәтсел [illegible] ҡаршы көрәшкә рухландыра. Тыныс[illegible] тың бөйөк лагеры тулы [illegible] донъя күләмендәге көс булып [illegible]. Атом ҡоралын тыйыу тураһында [illegible] гольм өндәмәһенә 500 миллион[illegible] берәк ҡултамғалар ҡуйылды, [illegible] эсенән Италияла 17 миллион [illegible] Францияла 16 миллион ҡултамға [illegible] ҡалды, был Франциялағы бөтә [illegible] 40 процентын тәшкил итә. Совет[illegible] юзы үҙенең эҙмә-эҙлекле тыныслыҡ [illegible] йөҙөсө тышҡы политикаһы менән [illegible] хеҙмәтсәндәрҙе, ер шарындағы бөтә [illegible] грессив кешеләрҙе ныҡлы тыныс[illegible] өсөн ҡыйыу көрәшкә рухландыра.

Советтар Союзы етәкселек [illegible] йөк тыныслыҡ лагерына ҡаршы [illegible] ҡаның үтә миллиардерҙары башы[illegible] ған империалистик лагерь тора. Был [illegible] ғыш һәм империалистик талау [illegible] яңы бөтә донъя һуғышын сисеп [illegible] иҫәп тота.

1950 йылда Америка импер[illegible] агрессияны әҙерләүҙән уны тураһ[illegible] сисеп ебәреүгә күсте. Уның [illegible] өсөн объект сифатында Кореяны [illegible] алыуы осраҡлы түгел. Америка [illegible] сорҙарының төп иҫәбе Корея аша [illegible] Халыҡ Республикаһына [illegible] башта Азияла бөтә донъя һуғышы[illegible]

Колхозсылар һәм колхозсы катын-кыҙҙар, МТС һәм совхоз эшселәре һәм эшсе катын-кыҙҙары, ауыл хужалығы специалистәрe! Ауыл хужалығы фәне казаныштарын һәм колхоздарҙың, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың алдынғы тәжрибәһен производствоға киңерәк индерегеҙ! Социалистик игенселек һәм малсылык алдынғыларының сафтарын арттырығыҙ!

(ВКП(б) Үҙәк Комитеты сакырыуҙарынан).

Шаулай донъя, шаулай ер шары

Энә тертерлек тә
Буш урын юк,
Буш урын юк бөтөн урамда.
Тик бер урам түгел, —
Ватан,
Донъя
Байраҡтарҙың нурына уранған!
Шаулай илем,
Шаулай һәр бер урам,
Шаулай донъя,
Шаулай Ер шары.
Тотош планетаны
Алған уран
Саф теләкле халык сафтары!
Көрәш кулға
Тотоношоп ҡулды,
Байраҡтарҙы сөйөп юғары —
Атлай халыктар
Ғәҙел,
Изге юлдан,
Йөрәктәрҙә һаҡлап туғанлыҡ.
Атлай халыктар.
Гүйә —
Дауыл алдынан
Иштелә диңгеҙ шаулауы.
Юк,
Был —
Диңгеҙ шауы түгел,
Донъя —
Тыныслыҡты шулай даулай ул.

Даулай әсә,
Даулай уны бала;
Даулай һалдат,
Шахтер,
докерҙар.
Үҙ талабын
Шағир йырға һала,
— Тыныслыҡ! — ти
Токарь,
Докторҙар.
Йылан һымак,
Үҙ өҫөнә боҫҡан
Ак йорттағы кара карәктар.
Белә улар:
Автоматтар тоҫҡап,
Канлы кылыстарҙы кайрап та —
Мөмкин түгел
Май ташкынын быуыу,
Мөмкин түгел уны таратыу, —
Мөмкин булмағандай
Тарих юлын
Бороп куйыу,
Артка каратып!
Шаулай илем,
Шаулай һәр бер урам,
Тыныслыҡты даулай Ер шары.
Тотош планетаны алған уран
Изге ниәтле халык сафтары!

Шәриф Бикҡол.

Май тантанаһы

Һин юкһынма, кояш, әгәр бөгөн
Гелдәр келеп, һиңә бакмаһа,
Һин көнләшмә, диңгеҙ, ярһыуыңды
Беҙҙең ярһыу бөгөн капласа.
Сөнки йәшәү көсө алыр өсөн
Бәхет нуры һипкән күҙҙәрҙән,
Бөтә уйҙар бөгөн бөтә караш
Мавзолейға табан төбәлгән.
Кулын болғап даһи, көлөмһерәп,
Карап тора байрам ташкынын,
Был йылмайыу беҙҙең тормошобоҙ,
Ул көрәштә беҙҙең ашкыныу.
Ошо йылмайыуҙың төҫө менән
Илебеҙҙә һәр көн таң ата,
Был йылмайыу кояш нуры булып
Тыуыр быуаттарҙы уята.
Янар тауҙар, әгәр үҙегеҙҙә
Бик-бик көсһеҙ итеп һиҙһәгеҙ,
Көнләшмәгеҙ, сөнки беҙ сафтарҙа
Урамдарҙан күкрәп киләбеҙ.
Әй, Тыуған ил, нисләй гүзәлһең һин,
Бөгөн тағы йырға күмелдең,
Рәхмәт һиңә, ошо йыр шикелле
Яңыраттың данлы ғүмерҙе.

Бөгөнгө йыр бөтә ер йөҙөнә
Май сәскәһе булып һибелде.
Ошо йырҙан илһам, ғәйрәт алып
Һөрөм күмгән океан артында,
Күкрәк киреп йырлай Поль Робсон
Донъя Тыныслығы хаҡында.
Был йыр бөгөн Пабло Перуданың
Шиғырҙары булып Чилиҙә,
Комартҡыһы булып тыныслыҡтың
Телдән-телгә күсеп йөрөйҙәр.
Һәм ул Назым Хикмәт уйы аша
Өйҙән-өйгә инә талпынып,
Хөкөм итә һатлыҡ палачтарҙы,
Күҙен аса төрөк халкының.
Һин юкһынма, кояш, әгәр бөгөн
Гелдәр келеп, һиңә бакмаһа,
Һин көнләшмә, диңгеҙ, ярһыуыңды
Беҙҙең ярһыу бөгөн капласа.
Сөнки йәшәү көсө алыр өсөн
Бәхет нуры һипкән күҙҙәрҙән,
Бөтә уйҙар бөгөн, бөтә караш
Юлбашсыға табан төбәлгән.

Нәрәм Бакиров.

Яңғыра, йыр!

Кар һыуҙары, көмөш кар һыуҙары
Далаларҙың битен йыуҙырҙы,
Нурлы, йырлы кеүәтле аҙ таңы
Яңы гүзәл майын тыуҙырҙы.
Яҙғы илһам менән канатланған
Зур шатлыклы минең халкымда,
Йыр яңғырай йәшлек, тыныс хеҙмәт,
Даһиебеҙ һәм Ватан хаҡында.
Зур кояш һәм Мәскәү йондоҙҙары
Яҙғы ергә нурҙар сәсәләр,
Киң Ватандың күркәм кырҙарында
Баш калкыта үлән, сәскәләр.

Сәскәләргә дары эсә түгел,
Йылы дәйсән кәрәк үҫергә,
Һәм Тыуған ил сәскә атһын өсөн
Тыныс хеҙмәт кәрәк кешегә!
Яңғыра, йыр, Майҙың дошмандары
Уның шаулап тыуыуын күрһендәр,

Ошо Майҙың тик тыныслыҡ менән
Бер туғандар булыуын белһендәр!
Яңғыра йыр, бар дошманға сәсеп
Миллиондарҙың якты уйҙарын,
Күм һин яңы үләт әҙерләгән
Утсыларҙың кара хыялын.
Һөйлә ергә корос кая кеүек
Беҙҙең туғандарҙың дуҫлығын,
Замандыбыҙҙың бөйөк хәрәкәтен,
Беҙ төҙөгән сафтар нығлығын.
Яңғыра, йыр, саф йөрәктән сығып,
Нык белһендәр океан артында,
Май көнөндәй якты хаклык барын
Шул хаклыктың еңеүе хаҡында!
Ишеттер һин бөтә вак йәндәргә
Ташкындарҙың көслө ағышын,
Ут-һуғышка карцы нәфрәт әйткән
Кешелектең ғәҙел тауышын!

Ғ. Ғәлиев.

МЕХАНИЗАТОРҘАР СТАХАНОВСЫ ВАХТАЛА

Беҙҙең трактор бригадаһының механизаторҙары, Иван Бунеев өлгөһөндә бөтә машиналарҙы социалистик һаклыкка алып, быйыл яҙғы сәсеүҙә сәғәт графигы нигеҙендә эшләргә, шартлы һәр бер тракторға кәмендә 1000 гектар ер эшкәртергә, 1 Май байрамын производство еңеүҙәре менән билдәләргә һүҙ биргәйнеләр.

Механизаторҙар социалистик ярышта алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр. Бригада сәғәт графигы менән эшләп, смена заданиеһен систематик рәүештә арттырып үтәй. Тракторсыларҙан Николай Чиглинцев, Фёдор Колоколов иптәштәр төнгө һөрөлгән ерҙәрҙе тырматыуҙы график менән билдәләнгән сроктан 12 сәғәткә алда тамамланылар. Хәҙер бөтә кес сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауға тупланды.

Беҙҙең трактор бригадаһы хеҙмәтләндергән Буденный исемендәге колхоздың 3 һәм 4 номерлы баҫыусылык бригадалары яҙғы сәсеүҙә алда баралар. Тракторсылар эшкәрткән һәр бер участка бары тик отлично билдәһе менән генә кабул ителә.

Яҙғы баҫыу эштәре башланғандан бирле һәр бер тракторист 150 — 200-әр килограмм яғыулыкка экономия яһаны. Бригада аҙнаһына бер смена быны ошо экономияланған яғыулык иҫәбенә эшләй.

М. Болов,

Бәрә МТС-ының беренсе номерлы трактор бригадаһы бригадиры.

* * *

Мишкә. (Телефон аша). Мишкә МТС-ы механизаторҙары 1 Майҙы сәсеүҙә стахановсы эш менән билдәләйҙәр.

Май алды ярышында беренсе урынды Молотов исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Алиев етәкселек иткән бригада алды. Тракторсылар байрам алды көндәрендә айырыуса зур күтәренкелек менән эшләнеләр. Тик һуңғы ике-өс көндә генә 500 гектарҙан артык майҙанда ашлык сәселде.

Тракторсыларҙан Әҙелбаев, Зәйнаков иптәштәр көн һайын ике норма эшләйҙәр һәм тик һуңғы көндәрҙә генә 300-әр килограмм яғыулыкка экономия яһанылар.

Х. Сафин.

Задание өс көндә үтәлде.

Туймазы районы Ленин исемендәге колхоз члендәре, ағас ултыртыу планын тиҙ көндә тамамларға һүҙ биреп, Май алды социалистик ярышына кушылғайнылар. Улар һүҙҙәрен эш менән акланылар. Иптәш Шакиров етәкселек иткән ағас ултыртыу бригадаһы члендәре, бөтә мөмкинлектәрҙә файҙаланып эшләүҙәре аркаһында, 26 гектар майҙанда ағас ултыртыу планын тулыһынса үтәнеләр.

Мичурин исемендәге колхозда ла ағас ултыртыу эштәре социалистик ярыш нигеҙендә алып барылды. Иптәш Ғәлиев етәкселек иткән ағас ултыртыу звеноһы бөтә колхозсылар ярҙамында 13 гектар ағас ултыртыу планын 3 көндә үтәне.

Звено члендәренән Әхмәтова, Сәләхова, Кәримова, Ғобәйҙуллина, Сәйфиева һәм Фәйзуллина иптәштәр, һәр көндә 600-әр төп урынына 1000-әр төп ағас ултыртып, башка колхозсыларға өлгө күрһәттеләр.

Ф. Миңлекәева.

* * *

Шаран районының бөтә колхоздарында ла ағас ултыртыу эштәре киң йәйелдереләр. Колхозсылар, ағас һәм бакса ултыртыу уң көндәренә кушылып, йыллык ағас ултыртыу планын яҙғы осорҙа тулыһынса үтәү өсөн көрәш ойоштороралар.

Районда 96 гектар майҙанда имән сәтләүеге академик Лысенко методы буйынса оялап сәселәсәк, ә калған майҙандарҙа кайын, шыршы, юкә һәм тополь ағастары ултыртыласак. Районның күп кенә колхоздарында ағас ултыртыу эштәре өлгөлө алып барыла.

«Пример» колхозында 10 гектар майҙанда ағас ултыртылып, государство планы тулыһынса үтәлде.

Крупская, Сталин исемендәге колхоздар 3 көн эсендә генә 8 гектар майҙанда ағас ултырттылар. Район буйынса бөтәһе 79 гектар майҙанда ағас ултыртылды. Колхоздарҙа емеш ағастары ултыртыу буйынса ла зур эш алып барыла. «Яңы юл», «Марс» колхоздарында йөҙәрләгән төп емеш ағастары ултыртылды.

Ф. Фәттәхов,

Шаран районы ауыл хужалығы бүлеге мөдире.

НАМЫҪЛЫ ХЕҘМӘТ

Пурман МТС-ының иптәш Фәткуллин етәкселек иткән трактор бригадаһының механизаторҙары Беренсе Май байрамы хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫтылар. Бригаданың тракторсылары Вәлиев, Фазуллин, Сафин һәм Ситдиков иптәштәр смена заданиеларен яҡшы сифатлы итеп систематик арттырып үтәйҙәр.

Баһау исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе тракторист иптәш Мөхәмәтьянов социалистик ярышта алған йөкләмәһен намыҫ менән башкара. Ул көндәлек эш нормаһын 120 — 130 процентка үтәй.

И. Дәүләтбаев.

* * *

Матрай районы колхоздары Беренсе Май байрамын ағас ултыртыу эшендә зур ғына уңыштар менән каршыланылар.

Чкалов исемендәге колхозда иптәш Групина етәкселегендә 6 гектар майҙанда ағас ултыртылды. «Красный Октябрь» колхозы, 3 гектар майҙанда ағас ултыртып, йыллык планды тулыһынса үтәне.

«Һакмар» һәм Молотов исемендәге колхоздарҙың ағас ултыртыу бригадалары ла планды үҙ вакытында үтәп сыктылар.

Г. Леонтьев.

Ярышып эшләүҙең яҡшы һөҙөмтәләре

Молотов исемендәге беҙҙең ауыл хужалығы артеле быйыл 12 гектар майҙанда баҫыу һаклауысы урман полосалары ултыртырға тейеш ине. Беҙ, Май алды социалистик ярышына сығып, был планды 13,3 гектарға еткереп үтәнек.

Бөтә колхозсылар катнашлығында урмандағы йәш үҫентеләрҙе казып алыу эше ойошторолдо. Һәр бер колхозсы 3 мең дана үҫенте әҙерләргә йөкләмә алғайны. Ул арттырып үтәлде. Һәр бер колхозсы 4000 — 5000 төп үҫенте әҙерләне.

Ағас ултыртыуҙа Үргән урта мәктәбе укытыусылары һәм укыусылары зур ярҙам күрһәттеләр. Улар көсө менән 3 гектар майҙанда ағас ултыртылды.

Ф. Абдуллин,

Зианчура районы Молотов исемендәге колхоз председателе.

БӨЙӨК ЭШ БАРА БЕҘҘӘ

Иҫ киткес зур төҙөлөш бара
Киң Тыуған илебеҙҙә —
Каналдар сулды һурара,
Тыуа яңы диңгеҙҙәр.
Ике туған йылға булып
Волга менән Дон акһан,
Якынлашыу юлын быуып,
Ике арала тау яткан.
Беҙҙең халык күптән инде
Кушыу яҡын уйлаған,
Теләге һәм дарте булған,
Тик дарманы булмаған.
Совет халкы кушса хәҙер,
Төҙөп унда киң шлюздар —
Калкыу ерҙе диңгеҙ итеп,
Кайнай бөйөк эш беҙҙә.
Кара-Комда эҫе саҡлы
Үлән заты үҫмәгән,
Сөнки унда йылдар буйы
Бер тамсы һыу төшмәгән.
Баруандарға кыйын булған
Үтеүе сүл юлдарын,
Яңғыҙ-ярым юлаусыны
Йоткан кайнар комдары.
Хәҙер унда канал тыуа,
Һалыналар киң шлюздар —
Сулдар сулеп итеп гөлдәр,
Кайнай бөйөк эш беҙҙә.
Кубань, Кырым далалары
Күптән иген үҫтергән,
Донъяға даны таралған
«Кубань бойҙайын» биргән,
Ләкин коро елдәр иҫеп,
Кингергәп игендәрҙе,
Сөнки һис бер кес булмаған
Тыйырға ул елдәрҙе.
Бөгөн үҫә ул ерҙәрҙә
Йәш кайындар, имәндәр.
Һайрар өсөн төрлө коштар
Инде осоп килгәндәр,
Йәшел урман, койма булып,
Киҫә елдең юлдарын.
Далаларҙы бакса итә
Бөйөк даһи уйҙары.
Совет иле кулдарында
Белем дә бар, кес тә бар,
Коммунизм көндәренә
Алып барған эш тә бар.
Заводтарҙа секунд һайын
Мең машина өлгөрә,
Яландарҙа һәр баҫыуҙа
Машиналар йүгерә.
Волгаға килә поездар
Мәскәүҙән һәм Уралдан,
Яңы бөйөк төҙөлөштәргә
Илтә улар коралдар.
Ағиҙелдең тулкынында
Сайкалып һалдар аға,
Ағас илтә кусты йылға
Зур ағайы — Волгаға.
Беҙҙә бөгөн һәр кешенең
Теләге тик бер генә:
Акыл, дәртен, көсөн биреү
Туған әсә — иленә.
Шул теләктең бер киҫәге
Булып тора заемдар,
Заемдар ярҙам итәләр
Тыуған илгә байырға,
Ярҙам итә улар тағы
Зур каналдар һалырға,
Тыуған илдең киңлегендә
Миллиард уттар яныырға.
Тау емереп, сүлде гөлләп,
Кушылалар диңгеҙҙәр.
Коммунизм көнөнә илткән
Бөйөк эш бара беҙҙә.

Ғариф Ғүмәр.

Республикабыҙ МТС-тарының механизаторҙары Май байрамын яңы еңеүҙәр менән каршыланылар.

Һүрәттә (һулдан уңға): 1. Белорет районы Сәрмән МТС-ының иптәш Зәбиров етәкселек иткән трактор бригадаһы механизаторҙары араһында коммунист-агитатор иптәш Н. Сәйфуллин төшкө аш вакытында газета укый; 2. Карамалы Ғөбәй МТС-ының (Кандра районы) Май алды социалистик ярышында нормаһын һәр вакыт 170 — 180 процентка үтәгән тракторист С. Насибуллин бригадаһы ер һөрөүҙә. Юғарыла — тракторист иптәш С. Насибуллин.

П. Петров һәм А. Червинский фотолары.

...кандырыуҙан, ә һуңынан уны башка континенттарға күсереүҙән торҙо. Нәк быны шуға күрә лә Корея халкына каршы интервенция башланыу менән үк Америка империалистәре Кытайҙың Тайвань утрауын баҫып алдылар. Нәк быны шуға күрә лә Америка авиацияһы Кытай территорияһына провокацион осоштар яһай. Кореяны тиҙлек менән буйһондороу, йылдам темптар менән Кытай границаһына якынайыу, Кытайға баҫып инеү — АКШ-тағы идара итеүсе круттарҙың артабанғы бөтә политикаһын һәм тактикаһын билдәләүсе ысын стратегия план быны шундай ине.

Ләкин был пландар ғәмәлгә ашырылырлык түгел. Данлы Кытай патриоттары-ирекләләре ярҙамында героик Корея халкы агрессорҙарҙың авантюристик стратегияһын һәм тактикаһын өҙҙе. Унар меңләгән Америка һалдаттары һәм офицерҙары Корея ерендә үҙҙәренә кәбер таптылар. Кытай границаһына тиҙләтелгән марш яһау урынына Америка империализмы оҙакка һуҙылған һуғышка осрай, перспективала ул хәрби яктан тулыһынса еңелеү вәғәҙә итә.

Тыныслык һөйөүсе халыктар АКШ-тың идара итеүсе круттарының Кореяға һәм Кытайға каршы агрессияһына асыу, нәфрәт һәм күрә алмаусылык менән яуап бирҙеләр. Бөтә прогрессив кешелек донъяһы Корея һәм Кытай халыктары менән үҙенең тәрән солидарлығын белдерҙе.

Кореяла еңелеүҙәр АКШ-тың үҙ «партнерҙарына-сателлиттарына» кыҫымын тағы көсәйтеүгә килтерҙе. Ләкин был ...бүгенгә агрессив Төньяк-атлантик блок эсендә карпылыктарҙы һәм көрәште көсәйтеүгә генә килтерҙе.

АКШ-тың идара итеүсе круттары политикаһының тәрән кризисе бөтә донъя күҙ алдына килеп баҫты.

Был кризиска улар нимә менән яуап бирҙеләр һуң? АКШ-тың президенты генерал Макартурҙы Алыҫ Көнсығышта верховный главнокомандующий вазифаһынан бушатты. АКШ-тың Кореялағы һәм Кытайҙағы хәрби һәм политик уңышһыҙлығы өсөн бөтә яуаплылыкты уға ауҙарҙы. Бер үк вакытта Американың идара итеүсе круттары Азияла ла, шулай ук Европала ла үҙҙәренең агрессив политикаларын көсәйтәләр. Америка авиацияһы бер-бер артлы Кытай территорияһына осоштар яһай. Кореяға яңы интервенционистик көстәр оҙатыла.

Шул ук вакытта АКШ-тың һәм булышсыларының Европалағы агрессив политикаһы көсәйтелә. Көнбайыш Германияны ремилитаризациялау һәм фашистик армияны яңынан төҙөү тулы ход менән бара.

Американың экономикаһын хәрби рельскә күсергәндән һуң, хәҙерге вакытта АКШ-тың идара итеүселәре маршаллаштырылған илдәрҙең экономикаһын тиҙлек менән хәрби рельскә күсереүҙе ғәмәлгә ашыралар. Был шуға килтерҙе: капиталистик илдәрҙә инфляция ғәйәт зур күләмдәргә етте. Бик кәрәкле тауарҙарға хактар кырка күтәрелде һәм күтәрелеүҙә дауам итә, әҫәләтә эш хакы туңдырыла, ә реаль эш хакы түбәнәйә. Налогтар кот оскос күләмдәргә етте, улар ярҙамында АКШ-та һәм башка илдәрҙә миллиардерҙар һәм миллионерҙар халык массаларын талайҙар. Кораллаңыуҙы бөтә яклап үҫтереп, АКШ-тың миллиардерҙары һәм миллионерҙары үҙ кеҫәләренә сикһеҙ күп табыш туплайҙар.

Утыҙынсы йылдарҙа Германияла булған кеүек үк, Америка идара итеүсе круттарының һуғышка әҙерләнеүе илдең бөтә эске тормошон бик нык фашислаштереүҙә үҙенең кәүҙәләнешен таба. Америка фашизмы бер үк вакытта Көнбайыш Европаның вассал илдәрен тиҙлек менән фашислаштереүгә ынтыла. Ул һәр ерҙә демократик азатлыктарҙың һуңғы калдыктарын юк итә, прогрессив ойошмаларҙы которонкко рәүештә эҙәләй, тыныслык яклыларҙы әҙәрләй, коммунистик партияларҙы тыйыуҙы талап итә.

Империализмдың уң социалистик ярҙамсылары тарафынан үткәрелә торған эшселәр синыфының һәм бөтә хеҙмәтсәндәрҙең сафын бүлгеләү һәм таркатыу политикаһына һуғыш тоҡандырыусылар айырым иғтибар бирәләр. Иптәш Сталин күрһәткәнсә, уң социалистар «яңы һуғыштар һәм интервенциялар әҙерләү эшендә эшселәр синыфында капитализмдең төп таянысы» булып торалар. Шул ук вакытта Америка идара итеүсе круттарының емереү хәрәкәттәре һөҙөмтәһендә Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы яңы бөтә донъя һуғышын сисеп ебәреү средствоһына әүерелә.

АКШ-тың идара итеүсе круттарының һәм уларҙың сателлиттаренең был авантюристик политикаһы халык массаларының һаман үҫә барған отпорына осрай. Капиталистик илдәрҙә эшселәр синыфының капитал кыҫымына каршы, тыныслык һәм демократия өсөн, үҙенең тормош хокуктары һәм интерестәре өсөн, хеҙмәтсәндәрҙең халык-ара солидарлығын нығытыу өсөн көрәштәре көсәйә бара. АКШ-та, Англияла, Францияла, Италияла, Японияла, Көнбайыш Германияла массовый забастовка тулкыны үҫә һәм көсәйә бара. Һуғыш тоҡандырыусыларҙың эҙәләнеүҙәренә карамаҫтан, милли, шулай ук халык-ара масштабтарҙа эшселәр синыфы сафтарының берҙәмлеге үҫә һәм нығый. Францияла һәм Италияла төп профсоюз үҙәктәрен таркатырға һәм йомшартырға маташыуҙарҙың әҙәлеүе быны бик асык раҫлау булып хеҙмәт итә.

1 Майҙы байрам итеү айканлы профсоюздарҙың бөтә донъя федерацияһының бөтә илдәр хеҙмәтсәндәренә ендәмәһендә былай тип әйтелә: «Халык-ара пролетар солидарлыктың был бөйөк көнөндә үҙ сафыбыҙҙы тағы ла тығыҙырак туплайык. Эшселәр синыфының һәм бөтә хеҙмәтсәндәрҙең көсө — берҙәмлектә. Берләшкән хәлдә, беҙ һуғышка юлды кәртәләрбеҙ, аслыкты, хәйерселекте һәм эшһеҙлекте юк итербеҙ, бөтә илдәрҙең хеҙмәтсән халкына иң яҡшы хеҙмәт һәм тормош шарттарын тәъмин итербеҙ, беҙҙең берҙәм тырышлыктарыбыҙҙы империалистәрҙең — халыктарҙы эксплуатациялаусыларҙың һәм һуғыш тоҡандырыусыларҙың лагерена каршы куйырбыҙ».

Эшселәрҙең Германияны ремилитаризациялауға каршы күптән түгел булып үткән Европа конференцияһы Европа эшселәренең туғандарса солидарлығын нығытыу юлында мөһим маяк һәм һуғыш тоҡандырыусыларына дәһшәтле иҫкәртеү булды. Был конференция айканлы Германия Демократик Республикаһының, шулай ук Көнбайыш Германия халкының прогрессив көстәре немец халкының үтелгәнде кабатлауҙы теләмәүен, уның Америка агрессорҙары кулында пушка ите булырға уйламауын һәм булмаясағын, уның башка халыктар менән бергә тыныслык өсөн көрәшеүен һәм тыныслыкты эшен яклауын тағы ла бер тапкыр күрһәттеләр.

Һуғыш тоҡандырыусыларға каршы халык көрәшенең авангардында коммунистик партиялар бара. Америка агрессорҙары һәм уларҙың ейәрсендәре коммунистарға карата истерияны шуның өсөн дә кабарталар: улар коммунистик партиялар йөҙөндә тыныслыкты атомсылар кулы һуҙыуынан, милли азатлыкты һәм бойондороксоҙлокто империалистик кол итеүселәрҙән, ысын демократияны фашист бандиттарынан яклаусы тапкыр халык етәкселәрен күрәләр.

Марксизм: идея массаға эйә булғандан һуң, материаль көс булып әүерелә, тип өйрәтә. Европала, Азияла, Америкала, Австралияла, Африкала миллион кешеләргә эйә булған тыныслык идеяһы бөйөк материаль көскә әйләнде. Тыныслыктың Бөтә Донъя Советы тыныслык интерестәрен һиҙгер һаклауысы ысын Халыктар Ассамблеяһы булып әүерелде. Күптән түгел халык-ара Сталин премияларын биреү, тыныслык өсөн бөтә көрәшселәрҙе артабан туплауға яңы стимул булды.

Халыктарҙың ихтыярын һәм уйҙарын кәүҙәләндереп, тыныслыкты яклаусыларҙың Икенсе Бөтә Донъя конгресы тыныслыкты ысын-ысындан нығытыуҙың программаһын билдәләне. Был программанан сығып, Тыныслыктың Бөтә Донъя Советы бөтә халыктарҙы биш бөйөк держава — Америка Кушма Штаттары, Советтар Союзы, Кытай Халык Республикаһы, Великобритания һәм Франция араһында Тыныслык Пакты төҙөлөүенә өлгәшеү өсөн көрәшергә сакырҙы. Һәр кемгә аңлашыла: Тыныслык Пактын төҙөү яңы һуғыш куркынысын булдырмау һәм оҙакка һуҙылған халык-ара хеҙмәттәшлеккә тәъмин итеү юлында аффектлы аҙым булып торор ине. Быны иң өсөн тыныслыктың Бөтә Донъя Советының Мөрәжәғәте халыктарҙың йәнле отклигон тапты. Тыныслык Пакты төҙөү тураһындағы Мөрәжәғәткә култамғалары йыйыу башланды ла инде һәм зур масштабтарҙа йәйелдерелә. Халыктарҙың бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталин былай тине: «Әгәр ҙә халыктар тыныслык эшен үҙ кулдарына алһалар һәм уны аҙағына тиклем яклаһалар, тыныслык яклап алып калыныр һәм нығытылыр». Халыктар тыныслыкты яклап алып калырға тәйенторҙар һәм алып кала алалар.

Беренсе Май көнөндә бөтә донъя хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең карашаарын тыныслык һәм халыктар араһында дуҫлык байрағын юғары тотоусы беҙҙең данлы Тыуған илебеҙгә юнәлтәләр.

1924 йылда үк әле иптәш Сталин «Халык-ара хәлгә карата» тигән мәкәләһендә, Советтар Союзының сит илдәрҙәге халык массалары араһындағы быға саклы булмаған авторитеты һәм ғәҙәттән тыш популярлеге, башка сәбәптәр менән бергә, халык массаларының һуғышка нәфрәте һәм уларҙың буржуазияның хәрби башлангыстарын емереүгә ынтылыуҙары менән аңлатыла, тип күрһәтте. «Халык массалары, — тип яҙҙы иптәш Сталин, — Совет власеның империалистик һуғышка каршы беренсе булып атака асыуын һәм, атака асып, һуғышты өҙгәнлеген беләләр. Халык массалары Советтар Союзының яңы һуғышка каршы көрәш алып барыусы берҙән-бер ил икәнен күрәләр. Улар Совет власене уның халыктар араһында тыныслык байраксыһы һәм һуғышка каршы ышаныслы таяныс булғанлығы өсөн теләктәшлек күрһәтәләр. Шуға күрә Совет власеның халык-ара популярлеге үҫеү империалистик һуғышка һәм уны ойоштороусыларға карата бөтә донъя халык массаларының нәфрәте үҫеү турағында һөйләй» (Әҫәрҙәр, 6 том, 300-сө бит).

Беренсе Май көнөндә бөтә илдәрҙең миллионлаған хеҙмәтсәндәре Америка агрессорҙарының һәм уларҙың ярҙамсыларының империалистик политикаһына каршы үҙҙәренең протестәрен белдереү, тыныслык эшен Америка, Англия, Франция һәм башка илдәр миллиардерҙаренең кул һуҙыуынан иҫән калыуға кайшамаҫ ихтыяҙарын белдереү өсөн боевой демонстрацияларға сығасактар.

Беренсе Майҙы байрам итеү бөтә илдәр хеҙмәтсәндәренең пролетар солидарлығының яңы бөйөк демонстрацияһы, тыныслык, демократия һәм социализм көстәренә боевой смотр буласак.

М. Маринин.

Художник Н. Ватолина эшләгән «Сәскә ат, беҙҙең май!» тигән плакат. «Искусство» издательствоһы тарафынан сығарылған. ТАСС фотохроникаһы.

Бөйөк төҙөлөштәргә

Быйыл Черниковск фанера комбинаты коллективы Куйбышев һәм Сталинград гидроэлектростанциялары төҙөлөштәренә фанера продукцияһы оҙатты.

Ошо көндәрҙә комбинат Куйбышев гидроэлектростанцияһы төҙөлөшөнән тағы бер вагон фанераға яңы заказ алды. Был почетлы заказды срогынан алда үтәү өсөн коллектив стахановсы вахтаға баҫты. Латипова, Зиннәтуллина, Нигмәтов иптәштәрҙең бригадалары вахта көндәрендә смена нормаларын 130 — 150 процентка үтәнеләр. Һөҙөмтәлә яңы заказ срогынан ике көнгә алда үтәлде.

Ғ. Мөхәмәтьянов,
Черниковск фанера комбинатының партбюро секретары.

Срогынан алда үтәлде

«Союзкишпродукт» системаһының әҙерләүҙәр ойошмалары коллективтары Май алды социалистик ярышына ҡушылып, апрель айы планын 135 процентка үтәргә йөкләмә алғайнылар. Хәҙер системаның предприятиелары ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Система буйынса 1 квартал планы срогынан алда үтәлде. Шулай уҡ апрель айында ла план үтәлеше 135 процент тәшкил итте. Юғары сифатлы продукция етештереү, үткән йылға ҡарағанда, байтаҡ артты.

Өфө эсәк эшкәртеү мастерскойы коллективы эсәктән фабрикаттар эшләү буйынса планды 155 процентка үтәне. Эсәк эшкәртеүсе мастерҙар Гнусина, Малышева, Танишева, Дубровина һәм башҡа иптәштәр үҙ нормаларын 130—140 процентка үтәйҙәр.

З. Картавкина, М. Мельникова һәм Е. Ершова иптәштәр парфюмерия эшкәртеү буйынса ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Уларҙың көндәлек норма үтәлеше 190—210 процент тәшкил итә.

С. Солтанов.
«Союзкишпродукт»тың Башҡортостан контораһы управляющийы.

Йөҙ мең километр өсөн

«Союззаготтранс»тың Башҡортостан тресы коллективы йөк ташыу планын срогынан алда үтәү өсөн көрәшә. Трестың 250 шоферы автомашиналарға капиталь ремонт яһамайынса, 100 мең километр юл йөрөү, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, ремонт бригадалары тәүлек әйләнәһенә эшләү өсөн ярышалар.

Коллектив, Май алды социалистик ярышына ҡушылып, быйыл йөк ташыуҙың йыллыҡ планын 5 декабргә үтәргә, йыл аҙағына тиклем пландан тыш 400 мең һум файҙа бирергә йөкләмә алды һәм «Союззаготтранс»тың Татарстан тресы коллективын социалистик ярышҡа саҡырҙы.

У. Камалов.

Ремонтсы комбайнерҙар ярышалар

Өфө районы Дмитриевка МТС-ы комбайнерҙары һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ пландың үтәлеше тураһында СССР Государство План Комиссияһының һәм СССР Үҙәк Статистика Управлениеһының Белдереүен ҙур шатлыҡ менән өйрәнделәр. Был Белдереүгә яуап итеп улар комбайндарҙы һәм башҡа урожай йыйыу машиналарын ремонтлауҙы 10 июнгә тамамларға йөкләмә алдылар. Май алды социалистик ярышында ремонтсы-комбайнерҙарҙан Иванов, Филиппов, тимерсе Ватин, Макаров һәм башҡа иптәштәр айырыуса яҡшы күрһәткестәр бирәләр.

Х. Әбүҙәров.

Николо-Березовка. Краснокама районы Пәнйегет МТС-ы комбайнеры комсомолка Нәзифә Ғилметдинова комбайн ремонтлауҙа өлгөлө эшләй. Ул, Май алды социалистик ярышына ҡушылып, апрель айында 4 комбайн моторын ремонтланы.

С. Камалова.

Заем отоштарын тикшерәләр

Ғафури районы «Йондоҙ» колхозы эргәһендәге комсомол комитеты члены Юлбарисовтың инициативаһы менән колхозсылар араһында государство заемдары облигацияларының отоштарын тикшереү ойошторолдо.

Тикшереү һөҙөмтәһендә сельпо работнигы Хәйретдинов 2 мең һум, колхоз члендарынан Рәхмәтуллин 200 һум, Сатликова 200 һум, Исхаков 100 һум, Ғәзизова 100 һум оттолар.

Ө. Кәһерманов.

Эреләтелгән колхоз клубында

Әлшәй районы Ташлы ауыл Советының Булганин исемендәге эреләтелгән колхозында культура-ағартыу эше яҡшы ойошторолған.

Клуб мөдире Л. Яһүҙин үҙ эшен план менән алып бара. Клубта йыш ҡына кинокартина күрһәтелә, художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәгенең сығыштары була һәм лекция, докладтар уҙғарыла. Күптән түгел «Халыҡ-ара хәл», «Яҙғы сәсеү осоронда стена газеталарының роле» тигән темаларға доклад тыңланды.

Рәис Низамов.

Китап уҡыусылар һаны арта

Саҡмағош. Рәжәп ауыл Советы эргәһендәге библиотекала китап уҡыусылар һаны артҡандан-арта бара. Уҙған йылды китап уҡыусылар һаны 124 кеше генә булһа, быйыл уларҙың һаны 359-ға етте. Китаптар фонды ла арта. Быйыл библиотекаға китаптар алыу өсөн бюджеттан тағы ла 2000 һум аҡса бүленде.

М. Ғәлиева.

Мәктәптәр инициативаһы

Салауат районының мәктәптәре, урман хужалығы һәм лесничество работниктары урман һәм баҡса ағастары ултыртыу буйынса ун көнлөктә күп кенә эш башҡарҙылар.

Малояз ете йыллыҡ мәктәбенең уҡыусылары быйыл яңы баҡса булдырып, унда 500 төп, Арҡауыл урта мәктәбе 200 төп ағас ултырттылар. Улар араһында акация, ҡурай еләге, ҡайын һәм башҡалар бар. Шулай уҡ Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы иптәш Абдулла Хәйруллин етәкселек иткән Нәсибаш урта мәктәбендә лә баҡса төҙәтеү һәм уны тулыландырыу буйынса ҙур эш алып барыла.

Ш. Хәйруллин.

* * *

Шишмә районы «Правда» колхозында иптәш М. Ниғмәтуллин етәкселек иткән бригада 2-3 көн эсендә 5 гектар майҙанда ағас ултыртты.

Бригада члендәренән Ғ. Әюпова, Н. Латипова, К. Иманғолова, Х. Суфиянова, М. Хөсәйнова һәм Ғ. Хисаметдинова иптәштәр көндәлек нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр.

А. Баязитов.

Тыныслыҡ яҙы

Бөгөнгө 1 Май иртәһе ниндәй күңелле һәм шатлыҡлы. Һәр бер уҡыусының йөҙөндә май ҡояшының нурҙарылай сикһеҙ шатлыҡ балҡый. Сөнки беҙгә бындай бәхетле ҡопшты — бәхетле тормошто коммунистар партияһы, Ленин һәм Сталин тыуҙырҙы.

Беҙ, 9-сы башҡорт урта мәктәбенең уҡыусылары тигеҙ сафтарға теҙелешеп, ал байраҡтар тотоп, Өфө хеҙмәтсәндәренең колонналарына ҡушылабыҙ. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған воиндарҙың балалары. Беҙҙең Тыуған илебеҙҙе һаҡлауҙа һәләк булған атайҙарыбыҙ урынына государство хәстәрлек итә, беҙ бөтә нәмә менән тәьмин ителгәнбеҙ. Ләкин йөрәктәрҙә ауыр эҙ ҡалдырған һуғыш бер ваҡытта ла онотолмаҫ.

Океан арты илдәре империалистары яңынан һуғыш уты тоҡандырырға уйлайҙар. Юҡ! Тыныслыҡ еңәсәк, сөнки тыныслыҡ яҡлыларҙың башында бөйөк Сталин тора.

Беҙҙең Майыбыҙ — тыныслыҡ Майы ул.

Р. Низамов,
9-сы мәктәп уҡыусыһы.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙаре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 28 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙары урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә 28 апрелдә АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Фекер алышыуҙарҙа беренсе булып сығыш яһап, Джессеп ҡоралланыуҙар һәм ҡоралды көстәр тураһындағы мәсьәләнең өс держава тарафынан тәҡдим ителгән формулировкаһын шыҡшып яҡлауҙы дауам иттерҙе. Джессеп, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарау хаҡында совет тәҡдимен ҡабул итеү йәһәһе, көнбайыштағы өс держава политикаһын үҙгәртеү тураһындағы ҡарарҙы ҡабул итеү менән бер тигеҙ булыр ине, тип ацынан ҡабатланы. Шулай итеп, АҠШ вәкиле көнбайыш державаларҙың ҡоралланыуҙарҙы арттырыу политикаһын тормошҡа ашырыуҙарын һәм дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне министрҙар Советының сессияһында ҡарарға совет тәҡдимен тап шына шул сәбәп менән ҡабул итергә теләмәүҙәрен тағы ла бер тапҡыр таныны.

Джессеп үҙе тарафынан үткән ултырышта ингерелгән һәм шигеҙһеҙлеге Громыко сығышында асыҡланған дәлилдәрҙе ҡабатлап, Триест тураһындағы мәсьәлә буйынса өс делегация формулировкаһын яҡланы.

Громыко Джессеп иҫкәртеүҙәренә яуап итеп сығыш яһаны.

— Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләнең формулировкаһына ҡарата Джессептең сығышы, — тине СССР вәкиле,— элекке ултырыштарҙа уның тарафынан, шулай уҡ Дэвис һәм Пароди тарафынан әйтелгән нәмәләр менән сағыштырғанда бер ниндәй ҙә яңылыҡты индермәне. Джессеп өс держава делегацияһының иҫке формулировкаһын әле булһа яҡлауҙы дауам иттерә. Был формулировка беҙҙең күрһәтеүебеҙсә, килешеү өсөн нигеҙ булып хеҙмәт итә алмай. Совет делегацияһы өҙлөкһеҙ уступкалар яһай алмай; беҙҙең уступкаларыбыҙ өсөн дә сик бар. Совет делегацияһы 4 апрелдәге совет тәҡдименең килешеү өсөн ярашлы нигеҙ булып тора, сөнки унда төп бурыс — дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу бурысы формулировать ителгән, тип элекке кеүек үк иҫәпләй. Шуға күрә СССР делегацияһы үҙ тәҡдимен яҡлай.

Триестҡа ҡағылған пунктҡа күсеп, Громыко былай тине:

— Совет делегацияһы 27 апрелдә, был мәсьәлә буйынса өс держава вәкилдәренең яңы формулировкаһы асыҡ түгел һәм шуға күрә ҡәнәғәтләнмәслек булып тора, тип күрһәткәйне инде. Был яңы формулировкала, сит ил эштәре министрҙаре Триест тураһындағы мәсьәләне икенсе бер нөктәнән түгел, ә Италия менән тыныслыҡ договорының Триестҡа ҡағылған өлөшөн үтәү нөктәһенән ҡарап тикшерергә тейештәр, тигән күрһәтмә юҡ. Джессеп тарафынан әйтелгән [...] беҙҙе тик совет формулировкаһы[...] рәҫ булыуына ғына ышандыра. [...] белдереүенән АҠШ вәкиленең Т[...] раһындағы мәсьәләне дүрт [...] тарафынан, шулай уҡ Италия [...] тыныслыҡ договоры буйынса [...] ҙыҡһынған илдәр тарафынан [...] йөкләмәләрҙе үтәү нөктәһенән [...] гел, ә башҡа икенсе бер нөктә[...] тикшереүҙе күҙҙә тотҡанлығы [...] АҠШ вәкиленең был белдереүе [...] беҙҙең формулировканы яҡлау [...] өҫтәмә дәлилдәр бирә, был формул[...] ла сит ил эштәре министрҙар[...] тикшерергә тейешле булыуҙары [...] дағы мәсьәләлә бер ниндәй ҙә [...] мауҫаплыҡты ҡалдырмай.

Джессептең, Англия һәм Амер[...] ғәскәрҙәре Триеста йәшәһе. «[...] гәҙә» тоталар, сөнки Триест [...] индерелмәгән һәм губернатор [...] мәгән әле, йәғни Италия менән [...] лыҡ договоры Триестҡа ҡағылған [...] дә үтәлгән хәлдә унда булырғ[...] булған законлы власть юҡ, тиг[...] лауҙарына ҡағылып Громыко был[...]

— Англия-Америка ғәскәр[...] Триеста йәшәүе өсөн, әгәр ҙә был [...] ҙәр Италия менән тыныслыҡ [...] буйынса йәшәһәләр ниндәй [...] нигеҙ тураһында һүҙ алып бар[...] мөмкин. Триест тап шына Англ[...] рикаһың законһыҙ хәрби база[...] рендерелгән. Ҡушма Штаттар[...] Великобританияның ғәскәрҙәре, [...] менән тыныслыҡ договорының [...] пиләрен ҡарамаҫтан, законһыҙ [...] Триеста йәшәйҙәр.

Австрия менән договорға ҡарата [...] Совет делегацияһы бер нисә [...] күрһәткән дәлилдәр буйынса, ал[...] килешелмәйенсә ҡала, тип [...] Громыко йомғаҡлау һүҙендә был[...] белдерҙе:

— 27 апрелдәге һәм бөгөнгө ул[...] тарҙа өс держава вәкилдәренең [...] тары беҙҙе был вәкилдәрҙең [...] буйынса килешеүгә өлгәшеүгә бул[...] итмәү генә түгел, ә киреһенсә, [...] не икенсе яҡҡа, килешеүгә [...] юлында тағы ла күберәк ҡыйынл[...] тыуҙырыу яғына тартыуҙарын [...] дыра. Был, дүрт державаның ҡора[...] ныуҙарын һәм ҡоралды көстәрен [...] ҡартыу тураһындағы мәсьәлә бу[...] Германияны демилитаризациялау [...] һындағы мәсьәлә буйынса, Атла[...] пакт һәм Американың хәрби ба[...] шулай уҡ Триест тураһындағы [...] буйынса уларҙың позицияһында [...]

Көн тәртибендә пункттарҙы [...] тырыу тәртибе тураһындағы [...] килгәндә, тип өҫтәне Громыко, [...] держава вәкилдәре, һуңғы сиг[...] ле пункттарҙың формулировкаһ[...] рата беҙҙең килешеүгә өлгәшеребеҙ[...] лем был турала һөйләүҙең кәрә[...] аңларҙар, тип ышанырға теләр [...]

Киләһе ултырыш 30 апрелгә [...] нелде.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН. 29 апрель. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 29 апрелдә, бөтә фронттарҙа ла Халыҡ армияһының частары Ҡытай добровольцтарының частары менән берлектә һуғыш [...] ларын йәйелдереүҙе дауам иттерә[...] хәбәр итте.

Көнбайыш фронтта Халыҡ арми[...] частары, дошманға йәнле көстә һәм [...] никала ҙур юғалтыуҙар яһап, Сеу[...] төньяҡтараҡ 20 километрҙа урынлаш[...] пунктҡа килеп еттеләр.

Раймонда Дьендең Мәскәүгә килеүе

Тыныслыҡ өсөн батыр көрәшсе, [...] цуз халҡының тоғро ҡыҙы Раймонда [...] һәм уның ире Поль Дьен 28 ап[...] Мәскәүгә килде.

Внуково аэродромында ҡунаҡтарҙы [...] вет ҡатын-ҡыҙҙарының Антифа[...] комитетының, совет йәштәренең Ан[...] шистик комитетының һәм матбуғат [...] килдәре ҡаршыланылар.

Тыныслыҡты яҡлаусылар хәрәк[...] актив ҡатнашсыһы Раймонда Дьен[...] вет ҡатын-ҡыҙҙарының Антифа[...] комитеты исеменән комитет секр[...] Л. Н. Петрова ҡотланы.

Микрофон алдында сығыш [...] Раймонда Дьен былай тип белдерҙе:

— Минең ҡәҙерле дуҫтарым, [...] иптәштәрем! Беҙ, мин һәм минең [...] Поль, Мәскәүгә килеүебеҙ менән [...] 1 Май байрамында ҡатнашасағыбыҙ [...] нән бик бәхетлебеҙ.

Мәскәү һәм һеҙҙең илегеҙ — с[...] лизм илепеп беҙҙең өсөн ин тыныс[...] миәтле булыуын һеҙҙәр менән ген[...] үҫ ҡыйын.

Йәшәһен француз халҡы менән [...] халҡының дуҫлығы!

Йәшәһен бөйөк Сталин! (ТАСС)

Сәғит Агиш

Яңы өйҙә

(Хикәйә)

Киске сәғәт туғыҙҙарҙа Яхиндар семьяһы сәй эсергә генә ултырғайнылар, кемдер тыштағы ишектә һаҡ ҡына итеп ҡаҡты.

Заводта өлкән механик булып эшләүсе Ғибат Яхиндең семьяһы был квартираға әсенсе көн генә күскәйне. Управдомдан башҡа бер кешенең дә килеп сыҡҡаны юҡ ине әле. Яхиндар ҙа, шул йәрләгән яңы квартираға күсеүселәр кеүек, карауаттарҙы, ашау өҫтәлдәрен, китап шкафы, буфет һәм башҡаларҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырап бөттөләр. Үҙ-ара «вкус» мәсьәләһендә бәхәсләшеп тә алдылар. Нәзифә еңгә үҙенсә яҡлай, балалар үҙҙәренекен дөрөҫ һанайҙар. Бөгөн бөтә семья бер тиклем килешеп, әйберҙәрҙе урынлаштырып бөттөләр.

Ғибат Яхиндең үҙ ғүмерендә алған бүләктәре «Почет грамотаһы» ғына түгел. Һуғыштан алып ҡайтҡан «Сталинградты яҡлау өсөн» медале, «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордены лә бар. Ана теге тумбочка өҫтөндә аҡ япма менән ҡапланып ҡуйылған зәңгәр патефон да уға бүләк итеп бирелгән. Ә «Почет грамотаһы» үҙе Яхиндең кем икәнен һорамайынса уҡ әйтеп тора.

Сәй алдынан «Почет грамотаһына»ла урын табылды. Уны ашау өҫтәле ҡуйылған стенаға, ике тәҙрә араһына, бөтә семья менән төшкән рәсемдең өҫтөнә ҡуйҙылар. Шуның менән өй йыйыштарылын бөттө һәм киске сәй эсергә ултырҙылар. Бөтә семья Ғибат, Нәзифә, институтта уҡып йөрөүсе ҡыҙы Мәфтүхә һәм икенсе малай Сарим менән Сәләм йәшел клеенка ябылған ҙур өҫтәлде уратып ултырҙылар. Һаҡ ҡына ишек шаҡыу тап шына ошо минутта булды.

— Ҡыҙым, кемдер килде, ишек ас әле! — тине Яхин. Шунда уҡ әстән генә килеүсенең кем булырға тейешлеген уйлап алды. Ул бик күп кешегә үҙенең яңы адресын әйтте, килеп ултырырға саҡырҙы. Ләкин уларҙың бөтәһе лә, һүҙ ҡуйышҡан кеүек, бер төрлө яуап ҡайтарҙылар: «Өлгәрербеҙ әле, иң әлек яҡшылап урынлашып ал!» — тинеләр. Яхин шуларҙы уйлап бөтмәне, ишек асырға тип сыҡҡан Мәфтүхәнең тауышы бөтә бүлмәләр буйлап яңғыраны:

— Эй, Мәрзиә апай, атай, әсәй! Мәрзиә апай килгән. Бөтә семья өҫтәл артынан торҙолар ҙа коридорға йүгереп сыҡтылар. Унда йәйге пальтонан, башына йоҡа аҡ шәлде еңелсә генә итеп ураған Мәрзиә баҫып тора.

Шау-шыу китте. Мәрзиәне етәкләп, өлтерәтеп залға алып индеҙәр. Бер нисә минут кемдең ни тип һорауы, нимә тип яуап ҡайтарыуы аңлашылмай, өй эсе гөүләп торҙо. Мәрзиәне йыуындырып алып ингәндә, ошоларҙы ғына төшөндөләр: Мәрзиә сәғәт етеләрҙә поездға килеп төшкән. Туп-тура Яхиндарҙың элекке квартираларына барған. Унан бер өҫөн ҡарсыҡ бында өйрәтеп ебәргән. Ауылдағылар бөтәһе лә иҫән-һау, сәләм әйткәндәр.

Мәрзиә Нәзифәнең һеңлеһе. Ауылда тора. Һуғыш йылдарында колхозда бригадир булып эшләгән. Үткән йыл һарыҡсылыҡ фермаһына күсергәндәр. Өс йылдан бирле ҡалаға килгәне юҡ ине, тик һирәк-һаяҡ ҡына хаттары, ара-тирә кеше артынан ебәргән сәләмдәре генә килеп тора ине.

Еҙнәһе Ғибат Мәрзиәнең белегенән тотоп бөтә бүлмәләр буйынса йөрөтөп сыҡты. Хатта ванна бүлмәһен дә, стенаға индереп эшләгән гардеробтарға тиклем асып-асып күрһәтте. Шунан һуң ғына сәй өҫтәле янына килтерҙе.

— Йә, балдыҙ, үҙегеҙҙә ни хәлдәр бар?

Мәрзиә тап уның тауышы менән яуап ҡайтарҙы.

— Беҙ ҙә тик ятмайбыҙ, еҙнәкәй, сәсеүҙе бына тигән итеп тамамланыҡ. Колхозды эреләтәбеҙ, үҫтерәбеҙ, ныҡытабыҙ. Һеҙҙең кеүек яңы йорттар һалабыҙ. Тауҙай итеп клуб эшләп ташланыҡ. Күперебеҙ ҙә элекке түгел инде. Өсәр тонналы ике машина күпер өҫтөндә осрашһалар, бер-береһенә сәләм генә бирәләр ҙә, уҙалар ҙа китәләр. Әүәле крандаслы ике кеше тап булһа, береһе сыҡҡанын икенсеһе көтөп тора торғайны. Ауылдың осонда бына тигән больница һалабыҙ.

— Ярай, Ғибат, ҡунаҡты һүҙ менән мауыҡтырма, ашап алһын, — тине Нәзифә. Мәрзиәнең һүҙе уға ла ҡыҙыҡ, ләкин ул хөрмәт итергә ашыға ине.

— Һөйләй ултыр! — тине Яхин.

— Ашап ултыр, — тип төҙәтте Нәзифә һәм ашамлыҡтарҙы уға табан этеберәк ҡуйҙы. Мәрзиә аҙ ғына тынысланғандай булғас:

— Нишләп сумаҙаның буш тип әйтмәйһегеҙ әле, — тип шаярып алды.

— Әйбер тейәп алып ҡайтырға тип килгәнһеңдер, башҡаса буш сумаҙан күтәреп йөрөмәҫ ине.

Мәрзиә сумаҙандың бушлығына бәйләнгән һүҙҙе әсенсе стакандан һуң ғына башлап китте, унда ла ҡапыл түгел, уратып, алыҫтан ғына.

— Мин һиңә, еҙнәй, һәйбәт квартираһалып бирер өсөн хөкүмәткә аҡса бирептергайным.

Яхин был һүҙҙе аңламайынса «нимә тиһең балдыҙ?» тигән һүҙҙе әйтер өсөн ауыҙ аса башлағайны, Мәрзиә һул ҡулын аҙ ғына күтәреп:

— Туҡта, туҡта һөйләп бөткәндә көт, — тине, — һин дә минең балаларым йылы мәктәптәрҙә уҡып йөрөһендәр, колхоз яландарында эш еңеләйһен өсөн яңы машиналар сығарылһын, тип аҡса биреп торғайның, шулай бит әле.

Яхин Мәрзиәнең бик серьез тон менән һөйләгән был һүҙен дә аңламаны. Шулай ҙа «Мәрзиә һүҙендә бер хикмәт була торған», тип аҙағын көттө. Сабырлығын йыйнап, шаярған һымаҡ:

— Шунан? — тине.

— Мин ул аҡсаларҙы тиҙ генә ҡайтарып алыр өсөн дә бирмәгәйнем. Һин дә шулай иткәнһеңдер тип уйлайым. Шулаймы?

— Мин аңлап бөтмәйем бит әле, балдыҙ.

Ғибат Яхин был юлы аҙ ғына артҡараҡ сигенеп, йәтешләберәк тыңланы. Мәрзиә хәҙер йылмая һәм Яхингә түгел, бөтә семьяға ҡарап һөйләй ине.

— Күрәһең, хөкүмәт минең был ҡылырымды оҡшатҡан һәм дәртләндереп алырға теләгән. Өсөнсө көн һаҡлыҡ кассаһынан биш мең һум аҡса килеп алһын тип, газета аша хәбәр иткән.

Ығаса был өҙөн кереште аҙағы нәмә менән бөтөр икән тип бик иғтибар менән көтөп ултырған Мәфтүхә, йәш балалар кеүек ике ҡулып сәпәкәй итеп, ҡысҡырып ебәрҙе.

— Заем отҡон, әйеме?

— Әйе шул, заем оттом. Биш мең һум сыҡҡан. Үҙебеҙҙән дә алырға мөмкин ине. Бер ынғайҙан йомоштарымды ла юллап ҡайтырмын, тип бында килеп алырға булдым. Сумаҙандың буш булыуы шуның өсөн ул.

Мәрзиә костюменең эске кеҫәһенән ҡағыҙҙар, аҡсалар араһына һалынған облигацияһын килтереп сығарҙы. Мәфтүхә шунда уҡ яҙыу өҫтәле өҫтөнән газеталар аҡтарып, отоштар иғлан ителгән номерҙе табып алды. Күҙҙәр газета өҫтөндә оҙаҡ туҡталманылар.

— 5000!

— Әйе шул, биш мең! Мин уны тикшермәһәм, килеп йөрөп буламы ни? Баяғы һүҙемдең аҙағы шул, беҙ, тимәксе булам мин, заем менән бер-беребеҙҙең тормошон яҡшыртыуҙа, ныҡытыуҙа хөкүмәткә ярҙам итәбеҙ. Мәфтүхә, шулайҙыр бит?

— Әлбиттә шулай.

* * *

Яхин менән Мәрзиә балконға сығып баҫтылар.

Яхин дә, Мәрзиә лә бер нәмә лә өндәшмәй ҡала өҫтөнә ҡарап торалар. Улар ошо ҡаланың йылдан-йыл яҡшыра, матурлана барыуында үҙ көстәрен, хеҙмәттәрен, ярҙамдарын күрәләр.

— Шәбәйә бит ҡала, — тине Яхин Ғибат.

— Шәбәйә. Хәҙер шәбәймәгән ер бармы ни! Хәҙер ауыл да бик үҙгәрҙе, — тип Мәрзиә уның фекерен ургаҡлаша. — Ә минең Ғәлимем, һинең бажаң был көндәрҙе күрә алманы. «Бажаны күрҙем. Варшаваны бергә азат иттек», тип яҙған хаттан һуң, оҙаҡ тормайынса үлем хәбәре килде.

— Киләсәк һуғыштарҙы булдырмаҫҡа кәрәк, ә бының өсөн... Бының өсөн намыҫлы хеҙмәт кәрәклегеп, Ленин — Сталин партияһы тирәһенә тағы ла тығыҙыраҡ туплланырға кәрәк икәнен уларҙың һәр береһе бик яҡшы белә ине.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ

БӨГӨН КИНОТЕАТРҘАРҘА

«Октябрь» кинотеатрында — «ТЫ[...] КОНДОР».

«Салауатта» — «БЫЛ ДОБЫ[...] БУЛДЫ».

Матросов исемендәге кинотеатр[...] «ЯҢЫ ЙОРТ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙаре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөше һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02464 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө Ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

1951 йыл
№ 86 (8803)
4 МАЙ
йома

хаҡы 20 тин.

Тыуған илебеҙ хеҙмәтсәндәре СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемына берҙәм яҙылып, Совет хөкүмәте, большевиктәр партияһы һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин тирәһенә үҙҙәренең тығыҙ тупланғанлыҡтарын демонстрациялайҙар.

Заемға ойошҡанлыҡ менән яҙылып, һөйөклө Ватаныбыҙҙың ҡеүәтен нығытайыҡ!

Тыуған илебеҙҙең артабан сәскә атыуы өсөн

[illegible], СССР Министрҙар Советы яңы заем — СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең 1951 йылғы Государство заемын сығарыу тураһында карар ҡабул итте. Яңы заем утыҙ миллиард һум суммаһында егерме йыл срокка сығарыла. [illegible] коммунизм төҙөү [illegible] вклад булып тораcаҡ һәм СССР-ҙың экономикаһын, культураһын артабан [illegible] булышлыҡ итәсәк.

Совет хөкүмәтенең карары бөтә совет халҡы, шул иҫәптән, республикабыҙ хеҙмәтсәндәре тарафынан ҙур [illegible] ҡаршы алынды. [illegible] предприятиеларҙа һәм учреждениеларҙа, колхоздарҙа, машина-трактор станцияларында һәм совхоздарҙа митингылар ҙур ойошҡанлыҡ менән үтте һәм республикала яңы заемға яҙылыу [illegible] бара. Беҙҙең [illegible] халҡы үҙ государствоһына [illegible] илебеҙҙең һәм [illegible] артабан сәскә атыуына [illegible].

Совет халҡы бөйөк Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә үҙенең фиҙакәр хеҙмәте менән һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты срогынан күп алда тамамланы, һуғыш килтергән яраларҙы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уңалтыуға һәм СССР халҡ хужалығын йылдам үҫтереүгә өлгәште. Илебеҙҙә промышленность һәм ауыл хужалығы производствоһы һуғышҡа тиклемге кимәлдә байтаҡ дәрәжәлә уҙып китте. Быны биш йыллыҡтың үтәлеше йомғаҡтары тураһында СССР Государство План Комитетының һәм Үҙәк Статистика Управлениеһының ошо көндәрҙә матбуғатта иғлан ителгән Белдереүе бигерәк тә асыҡ күрһәтәләр.

Әгәр ҙә биш йыллыҡ план менән 1950 йылда СССР-ҙың бөтә промышленность продукцияһы күләмен һуғышҡа тиклемге 1940 йылға ҡарағанда, 48 процентҡа арттырыу күҙҙә тотолған булһа, фактик алғанда был задание байтаҡ арттырып үтәлде. Йәғни биш йыллыҡтың һуңғы йылында промышленность продукцияһы 1940 йылға ҡарағанда, 73 процентҡа күберәк етештерелде. Үткән йылғы план 102 процентҡа үтәлде, промышленностең валовой продукцияһы 1949 йылға сағыштырғанда, 23 процентҡа үҫте.

Социалистик игенселекте күтәреү һәм колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу буйынса ла ҙур уңыштарға өлгәшелде. Бөртөклө культураларҙың урожайлылығын күтәреү буйынса биш йыллыҡ план менән 1950 йылға билдәләнгән задание арттырып үтәлде. Үткән йылда бөртөклө ашлыҡ культураларының валовой урожайы 1940 йылғы кимәлдән 345 миллион ботҡа күберәк алынды. Колхоздарҙа общественный малдар һанын арттырыу буйынса биш йыллыҡ план менән билдәләнгән задание ла арттырып үтәлде. Ауыл хужалығы хәҙерге заман техникаһы менән ныҡ байыҡтырылды.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдары эсендә алты меңдән артығыраҡ ҙур промышленность предприятиеһе аяҡҡа баҫтырылды, яңылары төҙөлдө һәм хоҙҡа ебәрелде.

Совет халҡы, гениаль юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең инициативаһында, коммунизмдең гигант төҙөлештәрен — Куйбышев, Сталинград, Каховка гидроэлектростанцияларын, Төп Төркмәнстан, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡрым, Волга—Дон каналдарын төҙөй.

Донъя йөҙөндә иң ҙур ҡоролмалар булған был яңы гидроэлектростанциялар йылына 22 миллиард киловатт сәғәттән күберәк электр энергияһы, йәғни Англияның бөтә гидроэлектростанциялары эшләп сығарған электр энергияһына ҡарағанда, ун һигеҙ тапҡырға, элекке Россияның бөтә станцияларына ҡарағанда ун ике тапҡыр самаһына күберәк электр энергияһы бирәсәк. Бындай гигант гидротехник ҡоролмаларҙы кешелек тарихы белгәне юҡ әле. Улар бары тик Совет социалистик ҡоролош шарттарында ғына тормошҡа ашырыла ала.

СССР-ҙың экономик ҡеүәте әленән-әле нығ күтәрелә барыуы һөҙөмтәһендә, илебеҙҙең милли доходы ла үҫә. Үткән йылда СССР-ҙың милли доходы 1940 йылға сағыштырғанда, 64 процентҡа артты. Социалистик экономиканың ҡеүәтле үҫеше нигеҙендә совет халҡының тормошо әленән-әле матурлана, байыраҡ һәм культуралыраҡ була бара. Сөнки большевиктәр партияһы һәм Совет хөкүмәте хеҙмәтсәндәрҙе мул тормошло итеү тураһында сталинсе хәстәрлек күрәләр. Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына хаҡтарҙың дүртенсе тапҡыр арзанайтылыуы, Государство бюджеты буйынса социаль-культура сараларына йыл һайын ҙур-ҙур суммаларҙа ассигнованиелар ебәрелеүе быныҡ асыҡ кәүҙәләнеше булып тора. Бына СССР-ҙың 1951 йылғы бюджетынан социаль-культура сараларына 120,8 миллиард һум ассигнование ебәрелеүен әйтеп үтеү ҙә етә.

Ә капиталистик илдәрҙә, бигерәк тә яңы бөтә донъя һуғышын тоҡандырырға маташыусы Америка, Англия, Франция кеүек империалистик илдәрҙә хеҙмәтсән массаның тормошо әленән-әле насарая бара. Уларҙа налогтарҙың өҙлөкһөҙ арта һәм хеҙмәт хаҡтарының түбәнәйә барыуы арҡаһында, ундарса миллион кешеләр аслыҡта һәм хәйерселектә йәшәйҙәр, бәләкәйлектә яфа сигәләр. Ҙур күләмдәрҙәге хәрби расходтарын ҡаплау өсөн хеҙмәтсәндәр тормошона һөжүм яһаусы империалистик илдәрҙә, мәҫәлән, АҠШ-та налогтарҙың күләме һуғышҡа тиклемге күләменән һигеҙ тапҡырға, Англияла дүрт тапҡырға, Францияла утыҙ тапҡырға артты.

Тыныс төҙөлеш эше менән шөғөлләнеүсе Советтар Союзы үҙенең экономик ҡеүәте һәм халҡының тормошо артабан сәскә атыу, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек өсөн көрәшә. Ленин — Сталин партияһы тарафынан етәкселек ителгән совет халҡы тыныс ижади хеҙмәте менән халҡ хужалығының бөтә тармаҡтарын да үҫтерә, сталинсе эпоханың мәһабәт ҡоролоштарын төҙөй. Ул шуның менән бергә, үҙенең һаҡлыҡтарын государствоға заемдар аша үтескә биреп тороу юлы менән дә илебеҙҙең ҡеүәтен артабан нығытыуҙа һәм хеҙмәтсәндәрҙең көн-күрешен күтәреүҙә актив ҡатнаша. Һәр бер совет кешеһе государство тарафынан сығарылған заемға яҙылыуҙы үҙенең патриотик бурысы итеп һанай. Шуға күрә лә, беҙҙең илебеҙҙә заемға яҙылыу ғәйәт ҙур политик һәм хеҙмәт күтәрелеше шарттарында, партияға, Совет хөкүмәтенә һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға тәрән бирелгәнлек тойғоһонда үтә.

Яңы заемды уңышлы урынлаштырыу социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен нығытыуҙа яңы вклад булып торасаҡ. Ул коммунизмдең сталинсе бөйөк төҙөлештәрен тиҙләтергә мөмкинлек бирәсәк.

Советтар Союзының башҡа республикалары һәм өлкәләрендәге кеүек үк, орденле Башҡортостан хеҙмәтсәндәре лә яңы заемға берҙәм һәм ойошҡанлыҡ менән яҙылып, Ленин—Сталин партияһы, Совет хөкүмәте һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин тирәһенә үҙҙәренең тығыҙ тупланғанлыҡтарын демонстрациялар.

Яңы заемға берҙәм яҙылып, бөтә донъяла тыныслыҡ терәге булған Совет государствоһының ҡеүәтен тағы ла күберәк нығытайыҡ!

Йомағужа районы иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы

Йомағужа. (Телеграф аша). Райондың колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС-тарҙың механизаторҙары һәм ауыл хужалығы специалистәре, Май алды социалистик ярышына ҡушылып, иртә культуралар сәсеүҙе хеҙмәтсәндәрҙең халҡ-ара байрамы көнөнә — 1 Майға тамамларға һүҙ биргәйнеләр. Был йөкләмә 30 апрелгә үтәлде. Бөтәһе 26.014 гектар майҙанда ашлыҡ сәселеп, план 101 процентҡа үтәлде. Сәсеү ҡыҫҡа сроктa, юғары агротехник кимәлдә үткәрелде.

Ворошилов исемендәге колхоз (председателе иптәш Храмов, партия ойошмаһы секретаре иптәш Юнусов), М. Горький исемендәге колхоз (председателе, СССР Верховный Советы депутаты иптәш Наумкин, партия ойошмаһы секретаре иптәш Кобзев), «Урал» колхозы (председателе иптәш Шаванов, партия ойошмаһы секретаре иптәш Шеев) сәсеүҙе айырыуса яҡшы үткәрҙеләр.

Районның колхоздары һәм МТС-тары һуңғы культуралар сәсеү өсөн тупраҡ әҙерләүҙе дауам итәләр, пар һөрөү эшенә башланылар.

Х. Әхмәтов,
ВКП(б)-ның Йомағужа район комитеты секретаре.

М. Закиров,
район Советы исполкомы председателе.

А. Әхмәдиев,
район ауыл хужалығы бүлеге мөдире.

Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы сәсеүҙе тамамланы

Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективы 17 мең 500 гектар майҙанда иртә культуралар сәсеүҙе 9 көн эсендә тамамланы. Бөтәһе 18 мең 257 гектар майҙанда ярой ашлыҡ сәселде.

Сәсеүҙә трактористәр Петр Пугачев, Дмитрий Комаров, Иван Лаушкин, Григорий Носков иптәштәр айырыуса яҡшы эшләнеләр. Улар 250—300-әр гектар майҙанда ашлыҡ сәстеләр.

БАШҠОРТ
өлкә
Китапханаһы

СССР МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕНДӘ

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемын сығарыу тураһында (1951 йылғы сығарылышы)

СССР халҡ хужалығын артабан үҫтереү, Волга йылғаһында Куйбышев һәм Сталинград гидроэлектростанциялары, Днепр йылғаһында Каховка гидроэлектростанцияһы, Төп Төркмәнстан, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡрым каналдары төҙөлештәрен финансировать итеү өсөн халҡтың средствоһын йәлеп итеү маҡсатында ССР Союзы Министрҙар Советы карар итә:

1. СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемын (1951 йыл сығарылышы) 20 йыл срок менән 30 миллиард һум суммала сығарырға.

2. Заем облигацияларын һәм улар буйынса отоштарҙы государство һәм урындағы налогтар һәм йыйнауҙарҙан ҡотҡарырға.

3. СССР Финанс министерствоһы тарафынан бирелгән СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемын (1951 йыл сығарылышы) сығарыу шарттарын раҫларға.

1951 йылдың 3 майында СССР Министрҙар
Советы тарафынан раҫланды

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемын (1951 йылғы сығарылышы) сығарыу ШАРТТАРЫ

1. СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемы 1951 йылдың 1 октябренән алып 1971 йылдың 1 октябренә тиклем срок менән сығарыла.

2. Заем тик халҡ араһында урынлаштырыу өсөн генә билдәләнә. Заемды урынлаштырыу тәртибе СССР Финанс министерствоһы тарафынан билдәләнә.

3. Заем разрядтарға бүленә, һәр бер разрядта 100 миллион һум була.

Һәр бер разряд 20.000 сериянан тора. Һәр бер разрядтең серияһында 100001 номерҙан алып 120000-гә тиклем номер була. Һәр бер сериялағы облигацияларҙың 01-ҙән алып 50-гә тиклем номеры була.

4. Заем облигацияһы 500, 200, 100, 50, 25 һәм 10 һумлыҡ итеп сығарыла.

500 һәм 200 һумлыҡ облигациялар бер серияның биш йәки ике номерле йөҙәр һумлыҡ биш йәки ике облигациянан тора һәм облигациялар күрһәтелгән һәр бер номерға бер үк ваҡытта сыға торған биш йәки ике отош алыуға хоҡуҡ бирәләр.

50, 25 һәм 10 һумлыҡ облигациялар йөҙ һумлыҡ облигацияларҙың өлөшө булып торалар һәм йөҙ һумлыҡ облигацияға сыҡҡан отоштоң тейешле өлөшөн ($\frac{1}{2}$, $\frac{1}{4}$, $\frac{1}{10}$) алыуға хоҡуҡ бирәләр.

5. Заем облигациялары буйынса бөтә доход отош формаһында түләнә.

Отоштарҙың дөйөм суммаһы уртаса алғанда заемдың егерме йыллыҡ срогы эсендә йылына 4 процент иҫәбенән билдәләнә.

Заемдың егерме йыллыҡ срогы эсендә бөтә облигацияларҙың 35 проценте ота, ә облигацияларҙың ҡалған 65 проценте үҙҙәренең нарицательный хаҡтары буйынса түләп алына.

Отҡан облигациялар түләп алына һәм артабанғы тираждарҙа ҡатнашмай.

Заемдар буйынса отоштар йөҙ һумлыҡ облигацияға 25.000, 10.000, 5.000, 1.000, 500 һәм 200 һум күләмендә билдәләнә. Был суммаға облигацияның нарицательный хаҡы ла (йөҙ һум) индерелә.

6. Заемдың 20 йыллыҡ срогы эсендә 40 отош тиражы — йыл һайын икешәр тираж үткәрелә.

Отош тираждары 1952 йылдан алып СССР Финанс министерствоһы тарафынан билдәләнгән сроктарҙа үткәрелә.

7. Һәр бер отош тиражында заемдың һәр бер разрядына йәғни һәр бер 100 миллион һумына түбәндәге һанда отоштар уйналасаҡ:

Облигацияларҙың нарицательный хаҡтарын индереп 100 һумлыҡ облигацияға отоштар күләме	Отоштар һаны				
	1—10 тираждарҙың һәр береһендә уйнала	11—20 тираждарҙың һәр берендә уйнала	21—30 тираждарҙың һәр береһендә уйнала	31—40 тираждарҙың һәр берендә уйнала	барлыҡ 40 тираждың бөтәһендә бер 100 миллион һумлыҡ заемға уйнала
25.000 һум	1	1	1	1	40
10.000 һум	5	5	5	5	200
5.000 һум	10	10	10	10	400
1.000 һум	100	100	100	100	4000
500 һум	1000	1000	1000	1000	40000
200 һум	7984	7734	7534	7284	305360
Отоштарҙың дөйөм һаны	9100	8850	8650	8400	350000
Отоштарҙың дөйөм суммаһы (һумдарҙа)	2321800	2271800	2231800	2181800	90072000

8. Отош сыҡмаған облигациялар 1956 йылдың 1 октябренән алып заем срогының аҙағына тиклем ҡалған 15 йыл эсендә үҙҙәренең нарицательный хаҡтары буйынса түләп (һатып) алыналар.

Заемдың һәр бер 100 миллион һумынан 1956 — 1961 йылдарҙа йыл һайын 2.500.000-әр һум, 1962 — 1966 йылдарҙа — 4.400.000-әр һум, 1967 — 1971 йылдарҙа — 5.600.000-әр һум һатып алына.

1956 — 1970 йылдарҙа һатып алынырға тейешле облигациялар йыл һайын үткәрелә торған түләү тираждары менән билдәләнә; түләү тираждарын үткәреү сроктары СССР финанс министерствоһы тарафынан билдәләнә.

Түләү тираждарында сыҡмаған облигациялар 1971 йылдың 1 октябренән һатып алыналар.

9. Отош сыҡҡан облигациялар, шулай уҡ нарицательный хаҡтары менән һатып алынырға тейешле облигациялар 1972 йылдың 1 октябренә тиклем түләү өсөн тапшырылыла алалар; түләүгә тапшырылмаған облигациялар был срок үткәндән һуң кәстәрен юғалталар һәм түләүгә алынмайҙар.

СССР финанс министры А. ЗВЕРЕВ.

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең (1951 йылғы сығарылышы) Государство заемына подписка үткәреүҙә профсоюз ойошмаларының ҡатнашыуы тураһында

Совет халҡы, большевиктәр партияһы етәкселегендә, бөйөк Сталин юлбашсылығында, социалистик ярышты киң йәйелдереп, СССР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең 1946 — 1950 йылдарға дүртенсе (һуғыштан һуңғы беренсе) биш йыллыҡ планын уңышлы үтәне, промышленноста һәм ауыл хужалығында һуғышҡа тиклемге кимәл байтаҡ уҙып кителде, совет фәне һәм культураһы яңы сәскә атыуға өлгәште.

Халҡ хужалығының күтәрелеше нигеҙендә хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күреше өҙлөкһөҙ үҫә һәм культура кимәле күтәрелә бара. Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына государствоның ваҡлап һатыу хаҡтарын иҫәп буйынса дүртенсе тапҡыр 1951 йылдың 1 мартынан алып арзанайтыу коммунистар партияһының, Совет хөкүмәтенең һәм иптәш Сталиндең халҡтың материаль көн-күрешен һәм культураһын күтәреү тураһында хәстәрлек итеүенең тағы ла бер асыҡ кәүҙәләнеше булып тора.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды тормошҡа ашырыуҙағы бөйөк уңыштар Тыуған илебеҙ хеҙмәтсәндәрен коммунизм өсөн көрәштә яңы хеҙмәт подвигтарына рухландыралар.

1951 йылдың планын срогынан алда үтәү өсөн, халҡ хужалығының артабанғы ҡеүәтле күтәрелеше өсөн бөтә халҡтың социалистик ярышы яңы көс менән йәйелдерелде. Куйбышев, Сталинград һәм Каховка гидроэлектростанцияларын, сулыҡтар йөрөй торған Волга-Дон каналын, Төп Төркмәнстан, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡрым каналдарын төҙөүҙе совет кешеләре ғәйәт ҙур энтузиазм менән тормошҡа ашыралар.

Совет хөкүмәтенең карары менән сығарылған СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство заемы ғәйәт ҙур халҡ-хужалығы әһәмиәтенә эйә булып тора. Ул халҡ хужалығының бөтә тармаҡтарының артабан йылдам үҫеүенә, Совет государствоһының экономик ҡеүәтен нығытыуға, совет халҡының материаль көн-күрешен һәм культураһын күтәреүгә булышлыҡ итәсәк.

Профессиональ Союздарҙың Бөтә Союз Үҙәк Советы Президиумы бөтә профсоюз ойошмаларына эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм интеллигенция араһында, Советтар Союзының бөтә хеҙмәтсәндәре араһында СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемына подписка үткәреүҙә актив ҡатнашырға тәҡдим итә.

Профсоюз ойошмаларына совет экономикаһын артабан үҫтереү һәм беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөүҙең сталинсе пландарын уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн, бөтә донъяла тыныслыҡ эшен нығытыу өсөн заемдың әһәмиәте тураһында хеҙмәтсәндәр араһында киң аңлатыу эшен йәйелдерергә кәрәк.

ВЦСПС Президиумы промышленностең, транспорттың, төҙөлештең бөтә эшселәрен һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙарын, ауыл хужалығы работниктарын, инженерҙарҙы, техниктарҙы, хеҙмәткәрҙәрҙе, фән һәм искусство работниктарын, Советтар Союзының бөтә хеҙмәтсәндәрен СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемына 3-4 аҙналыҡ эш хаҡы күләмендә бер көндән яҙылырға саҡыра.

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемына бер көндән һәм дөйөм яҙылыу менән совет халҡы социалистик Тыуған илебеҙгә, коммунистар партияһына, Совет хөкүмәтенә, бөйөк юлбашсыбыҙ һәм тәрән аҡыллы уҡытыусыбыҙ иптәш Сталинға үҙенең икһеҙ-сикһеҙ мөхәббәтен һәм бирелгәнлеген тағы ла бер тапҡыр демонстрациялаясаҡ.

ВЦСПС Президиумы.

ВЦСПС Президиумының 1951 йылдың
3 майындағы карары

Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре өсөн

Октябрьский нефтселәре СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемын сығарыу тураһындағы хәбәрҙе ҙур патриотик күтәренкелек менән ҡаршыланылар. Ҡала предприятиеларында, учреждениеларында, төҙөлеш управлениеларында күп халҡлы митингылар булып үтте. Был митингылар нефтселәрҙең һөйөклө Ватанға, большевиктәр партияһына, Совет хөкүмәтенә бирелгәнлегенең ҡеүәтле демонстрацияһы булып әйерелде.

2-се номерлы бораулау конторaһында үткәрелгән митингыла атаҡлы бораулау мастеры иптәш Белянинов бригадаһында эшләүсе иптәш Шинкаренко тулҡынланып сығыш яһап, былай тине:

— Англия-Америка империалистәре өсенсе бөтә донъя һуғышына ҡоторонып әҙерләнгән ваҡытта беҙҙең государствобыҙ бөйөк коммунизм төҙөлештәрен бөтә киңлегендә йәйелдереп ебәрҙе. Беҙҙең государствоға бурысҡа биргән аҡсабыҙ ана шул бөйөк төҙөлештәргә китәсәк, һәҡландырыуҙы киләсәкте яҡынайтасаҡ. Бына шуға күрә лә мин СССР халҡ хужалығын үҫтереү заемына ысын күңелдән ике айлыҡ хеҙмәт хаҡы — 3000 һумға яҙылам.

Беренсе бораулау конторaһында булған йыйылышта Советтар Союзы Геройы иптәш Ғәтиәтуллин сығыш яһаны.

— Беҙ тыныс кешеләр,—тине ул, — беҙ тыныслыҡ яҡлы. Бына шул тыныслыҡ өсөн беҙ үҙебеҙҙең намыҫлы хеҙмәтебеҙ менән генә түгел, үҙебеҙҙең хеҙмәт һумыбыҙ менән дә ярҙам итергә тейешбеҙ.

Ҡаланың беренсе һәм икенсе номерлы бораулау конторaһында, беренсе, өсөнсө һәм дүртенсе номерлы промыселдарында эшләүсе нефтселәр, төҙөүселәр, уҡытыусылар, врачтар яңы заемға ҙур күтәренкелек менән яҙылып, Тыуған илгә бирелгәнлектәрен демонстрациялайҙар.

Ю. Әхмәдиев.

Ҙур берҙәмлек менән

Ишембай. Заводтың ҙур һәм яҡты механика цехы халҡ менән тулған. Һәр бер кешенең йөҙөндә түҙемһеҙлек менән көтөлгән шатлыҡ билдәләре.

Тап сәғәт 6-ла радио СССР Министрҙар Советының яңы заем сығарыу тураһындағы карарын тапшыра башланы. Эшселәр был карарҙың һәр бер һүҙен ҙур иғтибар менән тыңланылар һәм көслө ҡул сабыуҙар менән хуплап ҡаршы алдылар. Шунда уҡ митинг башланды.

Бына трибунаға заводта 20 йылдан артыҡ эшләгән стахановсы, токарь иптәш Латышов күтәрелде.

— Илебеҙ биш йыллыҡ планды, — тине ул, — срогынан алда үтәп сыҡты, хәҙер ҙур күләмдә коммунизм төҙөлештәре алып барыла. Бөтә был уңышлыҡтар өсөн бөйөк Сталинға ысын күңелдән рәхмәт белдерәм. Совет заемының беҙҙең тормошобоҙҙо тағы ла матурыраҡ итеү өсөн китәсәген мин яҡшы беләм. Шуға күрә лә биш аҙналыҡ эш хаҡы суммаһына заемға яҙылып, башҡаларҙы ла үҙем менән тиңләшергә саҡырам.

Латышов иптәштән һуң сығып һөйләүсе Романенко, Стрельников һәм башҡа иптәштәр уның тәҡдимен ҡайнар яҡлауҙылар. Митингынан һуң ҙур берҙәмлек менән заемға яҙылыу башланды. Бөйөк Сталин исемен йөрөтөүсе был коллективта яңы заемға яҙылыу нигеҙҙә ике сәғәт эсендә тамамланды.

Ә. Шафиев.

ҠЫҘЫЛ МАЙҘАНДА БЕРЕНСЕ МАЙ

Мәскәүҙең яҙғы май иртәһе. Ҡыҙыл майҙан.

Кремль стенаһы артаһында теҙ шыршылар теҙелеп киткән. Ленин мавзолейҙенең тигеҙ һыҙаттары. Аҡ таштан эшләнгән трибуналарҙа СССР Верховный Советенең һәм РСФСР Верховный Советенең депутаттары, министрҙар, Советтәр Союзы Геройҙары һәм Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, Сталин премияһы лауреаттары, ҡалаларҙың һәм ауылдарҙың данлы стахановсылары, фән һәм техника кешеләре, культура һәм искусство деятелдәре, туғандаш республикаларҙан һәм донъяның бөтә яҡтарынан Мәскәүгә Беренсе Майҙы байрам итеү өсөн килгән ҡунаҡтар үҙ урындарын алалар.

Ҡыҙыл майҙанда — экономика һәм культура күтәрелеше юлы менән, социализм төҙөү юлы менән ышаныслы барыусы халыҡ демократияһы илдәренең делегациялары; үҙ иленә азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ яулап алған һәм яңы тормошто уңышлы ижад итеүсе бөйөк Ҡытай халҡының вәкилдәре; сит ил баҫҡынсыларының ҡоралды интервенцияһына ҡаршы, үҙ Тыуған иленең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн геройҙарса көрәшеүсе азатлыҡ һөйөүсе Корея халҡының делегаттары; герман халҡының тормош интерестары өсөн, берҙәм, бойондороҡһоҙ, демократик, тыныслыҡ һөйөүсе Германия өсөн көрәшеүсе Германия демократик республикаһынан килгән ҡунаҡтар; хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара солидарлыҡ көнөн совет халҡы менән бергә ҡаршылау өсөн Франциянан, Италиянан, Көнбайыш Германиянан, Австриянан, Англиянан, Америка Ҡушма Штаттарынан, Канаданан, Исландиянан, Финляндиянан, Швециянан, Даниянан, Голландиянан, Кубанан Мәскәүгә килгән эшселәр синыфы вәкилдәре, тыныслыҡ өсөн батыр көрәшселәр.

Ҡыҙыл майҙанда — парадҡа әҙер торыусы ғәскәрҙәр. Бөтә төр ҡоралдарҙың воиндәре тантаналы марш башлау өсөн сигнал көтәләр.

Бөтә күҙҙәр мавзолейға төбәлгәндәр. Уның гранит баҫҡыстарынан иптәш И. В. Сталин, В. М. Молотов, Г. М. Маленков, Л. П. Берия, К. Е. Ворошилов, Н. А. Булганин, Л. М. Каганович, А. И. Микоян, Н. С. Хрущев, А. Н. Косыгин, Н. М. Шверник, М. А. Суслов, П. К. Пономаренко, М. Ф. Шкирятов иптәштәр күтәрелә.

Трибуналарҙа ҡотлау алҡыштары яңғырай.

Иртәнге 10 сәғәт...

Кремлдең Спасск ҡапҡаһынан Беренсе Май парадын ҡабул итеүсе Хәрби министр Советтәр Союзы Маршалы А. М. Василевский сыға. Мавзолей янында Марипалды парад командующийе — Мәскәү хәрби округы ғәскәрҙәренең командующийе генерал-полковник П. А. Артемьев ҡаршылай. Ҡыҫҡаса рапорт һүҙҙәре әйтелә, һәм ғәскәрҙәрҙе ҡарау башлана. Маршал Василевский һалдаттарҙы һәм офицерҙарҙы 1 Май байрамы менән ҡотлай. Уға яуап итеп сафтар буйлап ҡеүәтле «ура!» тауышы үтә.

Ҡыҙыл майҙан нәмәселәр ҡотоп бер нисә минутҡа тын ҡала. Бына мең торбанан торған оркестр уйнай башлай. Глинканың «Славься» тигән мәһабәт мелодияһы яңғырай. Ғәскәрҙәрҙе ҡарау тамамланды. Маршал Василевский мавзолей трибунаһына күтәрелә һәм парад өсөн теҙелгән ғәскәрҙәргә, илебеҙҙең бөтә ҡоралды көстәренә, совет халҡына, Советтәр Союзына Беренсе Май байрамына килгән сит ил ҡунаҡтарына телмәр менән мөрәжәғәт итә.

Советтәр Союзы Маршалы А. М. Василевский телмәре

Иптәштәр, һалдаттар һәм матростар, сержанттар һәм старшиналар!

Иптәштәр офицерҙар, генералдар һәм адмиралдар!

Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре!

Сит илдәрҙән беҙгә Беренсе Май байрамына килгән беҙҙең ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙ!

Совет хөкүмәте һәм Бөтә Союз Коммунистәр (большевиктәр) Партияһының Үҙәк Комитеты исеменән һәм тапшырыуы буйынса беҙҙе хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамы — Беренсе Май көнө менән ҡотлайым һәм тәбрик итәм.

Совет кешеләре Беренсе Май байрамын ҙур шатлыҡ тойғоһо менән ҡаршылайҙар. **Ленин — Сталин** партияһы тарафынан етәкселек ителгән беҙҙең халҡыбыҙ яңы бөйөк еңеүгә өлгәште — халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планын уңышлы үтәне. Биш йыллыҡ планын ил мөһим заданиеларҙы байтаҡ арттырып үтәлде.

Бөйөк Сталин саҡырыуына эйәреп, беҙҙең илебеҙҙең эшселәре, крәҫтиәндәре һәм интеллигенцияһы был тарихи бурысты намыҫ менән хәл итеү өсөн көстәрен һәм хеҙмәттәрен йәлләмәнеләр.

Беҙҙең илебеҙҙең экономикаһы яңы ҡеүәтле күтәрелештә. Беҙҙең индустриябыҙҙың бөтә тармаҡтары ла юғары темптар менән үҫәләр. Колхоздарҙың общественный хужалығы үҫә һәм ныҡый, уның материаль-техник базаһы киңәйә. Беҙҙең халҡыбыҙ донъялағы иң ҙур электр станцияларын һәм каналдарҙы төҙөүҙә ғәйәт ҙур рухланыу менән тормошҡа ашыра. Халыҡ хужалығын артабан техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу ҙур масштабтарҙа үткәрелә. Илебеҙҙең милли доходы йылдан-йыл үҫә бара.

Халыҡ хужалығын тайпылышһыҙ күтәреү нигеҙендә беҙҙең илебеҙҙә киң ҡулланыу тауарҙарына хаҡтар систематик рәүештә арзанайтыла, ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәренең материаль хәле яҡшыра. Культураны, фәнде һәм искусствоны үҫтереүҙә яңы уңыштарға өлгәшелде.

Коммунизмға табан беҙҙең алға хәрәкәт итеүебеҙ менән бергә совет кешеләренең юғары рухани сифаттары әленән-әле күберәк асыла, уларҙың аңлылығы һәм ижади инициативаһы үҫә бара.

Бер генә капиталистик илдә лә бындай хәл юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел.

Советтәр Союзы халыҡтарының өлгөһөнә эйәреп, халыҡ демократияһы илдәренең хеҙмәтсәндәре социализм төҙөү юлы менән уңышлы баралар. Бөйөк Ҡытай халҡы яңы тормошто уңышлы төҙөй.

Советтәр Союзы һәм халыҡ демократияһы илдәре үҙ тырышлыҡтарын хужалыҡ һәм культура үҫешен эшенә йүнәлткән ваҡытта, Америка империалистәре тарафынан етәкселек ителгән капитал илдәрендә яңы бөтә донъя һуғышына ҡыҙыу әҙерләнеү алып барыла.

Америка монополистәре һуғыш башҡа илдәрҙе талау һәм ҡол итеү өсөн кәрәк. Тап бына шуға күрә лә улар Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында, ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартыу, атом ҡоралын тыйыу тураһында, Совет хөкүмәтенең тәҡдимдәрен кире ҡаҡтылар ҙа.

Америка империалистәре азатлыҡ һөйөүсе Корея халҡына ҡаршы 10 айҙан ашыуыраҡ инде баҫып алыу һуғышын алып баралар. Был ғәҙел булмаған һуғыш Америка халҡына бер ниндәй ҙә ҡаныҡ килтермәне һәм килтермәйәсәк. Америка империалистәре үҙҙәренең агрессив политикаһының кризисын йәшерә алмаясаҡтар. Кореялағы үҙҙәренең уңышһыҙлыҡтарын аҡлатырға маташҡан килбәтһеҙ манёврҙары уларға ярҙам итмәйәсәк.

Империалистарҙың американ агрессив политикаһы киң халыҡ массаларында тәрән нәфрәт тыуҙыра. Халыҡтар һуғыш теләмәйҙәр. Бөтә илдәрҙә лә тыныслыҡ өсөн көрәшселәрҙең көн һайын үҫә барған хәрәкәте агрессив көстәргә ҡаршы сыға.

Советтәр Союзына килгәндә, уның политикаһы асыҡ. Беҙҙең хөкүмәтебеҙ һуғышты булдырмау һәм тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу политикаһын һәр ваҡытта үткәрҙе һәм артабан да тайпылышһыҙ үткәрәсәк.

Бөтә совет халҡы, бөтә алдынғы кешеләр был политиканы хуплай.

Иптәштәр!

Беҙҙең коммунистар партияһы һәм үҙенең юлбашсыһы һәм уҡытыусыһы иптәш Сталин тирәһенә тығыҙ тупланған совет кешеләре беҙҙең государствобыҙ ҡеүәтен артабан нығытыу эшенә, коммунизм төҙөү эшенә үҙҙәренең бөтә көстәрен бирәсәктәр.

Советтәр Союзының данлы Ҡоралды Көстәре государство интерестарын һәм совет халҡының ижади хеҙмәтен һаклайҙар. Беҙҙең халҡыбыҙ Совет Армияһына, һәм Хәрби-Диңгеҙ флотына ныҡ ышана ала. Совет Армияһы һәм Хәрби-Диңгеҙ флоты Тыуған илебеҙ алдындағы үҙ бурыстарын лайыҡлы һәм намыҫ менән үтәү өсөн һәр ваҡыт әҙер торалар.

Йәшәһен Беренсе Май — хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара солидарлыҡ көнө, бөтә илдәр эшселәренең туғандашлыҡ көнө!

Йәшәһен героик совет халҡы һәм уның Ҡоралды Көстәре!

Йәшәһен беҙҙең тыуған Совет хөкүмәтебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең бөтә еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы Бөтә Союз Коммунистәр (большевиктәр) Партияһы!

Беҙҙең һөйөклө юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ бөйөк **Сталинға** дан! Ура!

* * *

Большевиктәр партияһы хөрмәтенә, бөйөк Сталин хөрмәтенә әйтелгән ҡотлауҙың һуңғы һүҙҙәре менән бергә Кремль стеналары артынан Беренсе Май салютының залптары яңғырай. Советтәр Союзының Государство Гимны тантаналы яңғырай.

Команда бирелә һәм парад башлана.

Беренсе колоннала — Совет Армияһының офицерҙары, хәрби академияларҙа уҡыусылар.

Хәрби академиялар колоннаһын моряктар колоннаһы алмаштыра.

Моряктар — рус флотының данлы традицияларын һаҡлаусылар, яңы эраның — бөйөк социалистик революция эраһының башланыуын үҙ залптары менән белдергән легендар «Аврора» матростарының улдары бара...

Моряктар мавзолей янына килеп еткәс, һауала бик бейектә беренсе самолеттар күренде. Беренсе Майҙың һауа парады башланды.

Дүрт моторлы флагман карабында — һауа парадының командующийе авиацияның гвардия генерал-лейтенанты В. И. Сталин. Флагмандың эскорты — тиҙ осоусы дүрт истребитель.

Трибуналарҙа тороусыларҙың иғтибары һауаға йүнәлтелгән. Тиҙлектең һәм көстөң һоҡландырғыс картинаһынан күҙҙәрҙе алыуы ҡыйын. Гигант ҡулы менән йәйәнән ебәрелгән уҡ кеүек ос истребитель килеп сыға һәм шунда уҡ Василий Блаженный храмының биҙәкләп эшләнгән ҡубалары артыҡа инеп юғала. Был истребителдәрҙең штурвалдары артында яңы техникаға тулыһынса эйә булған батыр пилоттар ултырған.

Һауала ҡанатлы воиндар осҡан ваҡытта, Ҡыҙыл майҙанға Мәскәүҙәге РСФСР Верховный Советы исемендәге Ҡыҙыл Байраҡлы, илебеҙҙәге иң ҡарт пехота училищеһенең тәрбиәләнеүселәре инә. Ҙур кәүҙәле, киң яурынлы рус батырҙары винтовкаларын күтәреп киләләр. Бер-береһенә яҡын килтерелгән штыктар линияһы һелкенмәй. Сафтар ҡаушамайҙар. Был тәртиплектә, берҙәм аҙымда, идеаль тигеҙлектә — быуаттар буйына килгән традицияның көсө.

Унан һуң икһеҙ-сикһеҙ Тыуған илебеҙҙең ундарса мең километрға һуҙылған сиктәрен һаҡлаусы пограничниктар киләләр.

Пограничниктарҙан һуң — Беренсе Май парадында ҡатнашыусы иң йәш кешеләр суворовсылар һәм нахимовсылар үтә. Данлыҡлы воиндарҙың һәм моряктарҙың Калинин һәм Тула Суворов училищеларында, Тбилиси Нахимов училищеһында уҡыусы балалар үҙҙәренең атайҙарына лайыҡлы булыу өсөн тырышалар.

Нахимовсылар үтеп бөткәндән һуң майҙан буш ҡалды. Поход маршын матур көйлө «Үткән походтар маршы» алыштыра. Ул йөрәктәрҙә граждандар һуғышы йырҙарынан булған таныш көйҙәрҙе уята. Беренсе атлы армияның легендар походтары хәтергә төшә. Һәм бына урам буйлап ритмлы ат тояҡтары тауыштары ишетелә.

Атлылар!..

Ҡыҙыл майҙанға М. И. Калинин исемендәге Суворов орденлы Ҡыҙыл Байраҡлы Тамань Гвардия уҡсылар дивизияһының полктары инә.

Тамань уҡсылар дивизияһының бронетранспортерҙары рәт һайын дүртәр-дүртәр булып үтәләр. Ошо мәһабәт тигеҙ саф тамашселәрҙең хәрби эшкә эйә булыуҙарына рапорт булып тора.

Майҙанға Беренсе Май парадының артиллерия колоннаһы инә. Зенитҡалар артынан танкыға ҡаршы пушкалар, унан арыраҡ урта һәм ауыр танкылар бара.

Бтеҙ «Катюшалар» үтәләр.

Тарихи музей артынан танкылар колоннаһы күренде. Алда килеүсе танкының башняһы асыҡ. Уның өҫтөндә Ленин орденлы Ҡыҙыл Байраҡлы Кантемир дивизияһының гвардия байрағы елберҙәй.

Ҡыҙыл майҙан техника менән тулды. Танкылар һәм һәр төрлө калибрҙағы үҙе йөрөй торған орудиелар мавзолей алдынан өҙлекһеҙ ташҡын булып үтәләр.

Совет Армияһының еңелмәҫ ҡеүәте символы булған «ИС» танкылары марши Беренсе Май парадын йомғаҡлай.

Парад тамамланды.

Ул социалистик промышленностең өҙлекһеҙ үҫеүен, беҙҙең илебеҙҙә техник фекерҙең арыу-талыуҙы белмәй алға үҫеүен көүҙәләндереүсе күренеште. Совет Армияһының техника менән ҡоралланыуының юғары кимәлен бөтә донъя алдында асыҡ демонстрацияланы. Ул ҡатмарлы боевой техникаға тамам эйә булған совет воиндарының юғары оҫталығын демонстрацияланы. Ул, аҙаҡ килеп, совет халҡы үҙенең бөтә көсөн биргән тыныс хеҙмәтте, беҙҙең сталинса төҙөлештәребеҙҙе яҡлай торған ҡөсәбеҙ бар икәнлеген демонстрацияланы.

* * *

Мәскәү хеҙмәтсәндәренең демонстрацияһы башланды.

Башҡала байрамса кейенгән. Биналарҙа ВКП(б) Үҙәк Комитетының саҡырыуҙары яҙылған ҡыҙыл материалдар, панноларҙ, транспаранттар, флагтар. В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең ҙур портреттары, партия һәм хөкүмәт етәкселәренең портреттары.

Бөйөк ҡаланың урамдарында шатлыҡлы яҙғы көндө иртә менән үк йырҙар яңғырай, оркестрҙар уйнай ине.

Урамдарҙа байрамса күңелле. Мәскәү кешеләре заводтар, фабрикалар һәм учреждениелар эргәһенә йыйналғандар. Бынан демонстранттар колонналары теҙелделәр һәм Ҡыҙыл майҙанға йүнәлеп ҡаланың киң магистралдарына сыҡтылар.

Хеҙмәтсәндәрҙең колонналары өҫтөндә Ҡыҙыл Байраҡтар, ВКП(б) Үҙәк Комитетының Беренсе Май саҡырыуы яҙылған ҡыҙыл материалдар, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта совет халҡының гүзәл еңеүҙәре тураһында һөйләүсе һандар яҙылған транспаранттар. Бик ҙур панно совет кешеләренең тыныслыҡ өсөн арыу-талыуҙы белмәүсе көрәшен көүҙәләндерә. Колонналар өҫтөндә — бөйөк юлбашсыларыбыҙ В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең меңдәрсә портреттары, партия һәм хөкүмәт етәкселәренең портреттары.

Ҡыҙыл майҙанда тантаналы мәһабәт күренеш.

Байраҡ йөрөтөүсе 1.200 кеше башҡала хеҙмәтсәндәренең байрам демонстрацияһын башланы.

Ҡыҙыл майҙандан пионерҙар колоннаһы үтә. Балаларҙың ҡулдарында ал мәк сәскәләре. Алда — йәш бәләкәй музыкант марш уйнай.

Улар артынан Мәскәү ҡалаһының 131-се номерлы мәктәбенең беренсе класс уҡыусыһы мәктәп формаһы кейгән 8 йәшлек Ира Мельникова бара. Ул ҙур сәскәләр букеты тотҡан.

Пионерҙар иптәш Сталиндең сәскәләр менән биҙәлгән ҙур портретын алып баралар.

Колонна мавзолейға яҡынлаша. Ира Мельникова шеренгаһынан сығып мавзолей трибунаһына табан йүгерә, баҫҡыстан күтәрелә, ул иптәш Сталинға сәскәләр букеты бирә.

Майҙандан бер үк ваҡытта Киров, Ленин, Красная Пресня, Совет, Свердлов һәм башҡаланың ҡалған райондарының хеҙмәтсәндәре үтә.

Хеҙмәтсәндәрҙең күҙ ҡараштары трибунаға, һөйөклө юлбашсыға йүнәлгәндәр. Уҡытыусыбыҙ һәм дуҫыбыҙ, туғаныбыҙ Сталин хөрмәтенә «ура» һәм ҡотлау тауыштары яңғырай.

Киров районы хеҙмәтсәндәре иптәш Сталиндең сәскәләр менән биҙәлгән портретын күтәргәндәр. Транспарантта тере сәскәләр менән: «Бөйөк Сталинға дан!» тигән һүҙҙәр яҙылған.

Кировсылар Волгала, Төркмәнстанда, Донда, Ҡырымда һәм Украинала коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен ҡороусы совет кешеләренең фидакәр хеҙмәтен көүҙәләндереүсе матур паннолар алып киләләр.

— Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре — бөтә халыҡ эше!

Бөйөк төҙөлештәрҙең заказдарын үтәп башҡала хеҙмәтсәндәре юғары етештереүсәнлекле хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр.

Бына Ленин районының хеҙмәтсәндәре үтә. Бөтә илгә билдәле булған фән деятелдәре баралар. Транспарантта: «Марксистик-ленинсе теория — коммунизм өсөн көрәштә бөйөк көс» тигән һүҙҙәр яҙылған.

Ғалимдар бөйөк юлбашсы һәм фән корифейы И. В. Сталиндең портретын алып киләләр.

Ғалимдар колоннаһы өҫтөндәге матур транспаранттар һәм диаграммалар фәндең производство менән ижади дуҫлығы, ғалимдарҙың коммунизмдең бөйөк төҙөлешенә ярҙамдары тураһында һөйләйҙәр. Мендән дә артығыраҡ заводтар, фабрикалар, совхоздар һәм колхоздар башҡаланың фән деятелдәренән даими ярҙам алалар.

Ғалимдар менән йәнәшәлә «Красный пролетарий» заводының колоннаһы. Улар Май алды социалистик ярышы йөкләмәләренең срогынан алда үтәлеүе тураһында Тыуған илгә рапорт бирәләр.

Ҡеүәтле кешеләр ташҡынының игеһе-сиге күренмәй. Башҡала майҙаны өҫтөнән көслө ура тауышы яңғырай. Мәскәү хеҙмәтсәндәре Беренсе Май көнөндә — хеҙмәт байрамы көнөндә меңдәрсә панноларҙа һәм ҡыҙыл материалдарҙа һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтағы тарихи еңеүҙәрҙе көүҙәләндергәндәр. Улар, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың уңыштары менән ғорур булған кешеләр партияға, иптәш Сталинға киләсәктә лә илдең ҡеүәтен нығытасаҡтары, коммунизм төҙөп, уның байлығын арттырасаҡтары тураһында вәғәҙә бирәләр.

— Совет халҡы — бөтә донъяла тыныслыҡтың һәм халыҡтар именселегенең ышаныслы тереге!

— СССР — тыныслыҡтың тоғро һаҡсыһы, прогресс һәм культураның нығлы һәм эҙмә-эҙлекле һаҡлаусы!

Трибуналар алдынан данлыҡлы революцион традициялар районы — Красная Пресня районы хеҙмәтсәндәре үтә. Улар араһында Дзержинский исемендәге Трехгорный мануфактура комбинаты коллективы. Ҙур паннола ошондай һүҙҙәр яҙылған:

— Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында киҙе-мамыҡ туҡымаларын етештереү 2,4 тапҡырға артты.

Төҙөүселәр үтәләр. Тыныслыҡ һәм халыҡтар бәхете өсөн көрәштә ойоштороусы, яңы сталинсе эпоханың байраҡ йөрөтөүсеһе һәйбәтле Мәскәү йылдан-йыл үҫә һәм матурлана. Үткән йылда төҙөүселәр 800-ҙән артығыраҡ йорт һалдылар. Быйыл улар 710 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөйәсәктәр.

Башҡала хеҙмәтсәндәренең байрам итеүсе ташҡынының иге-сиге юҡ кеүек.

Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара солидарлығы көнөндә, бөтә илдәр эшселәренең туғандашлыҡ көнөндә, совет кешеләре бөтә донъя халыҡтарына ысын йөрәктән ҡотлау һүҙҙәре менән мөрәжәғәт итәләр.

Демонстранттар Польша республикаһы президенты Б. Берутты, Польша республикаһының министрҙар Советы председателе Ю. Циранкевичты, Чехословакия республикаһы президенты К. Готвальдты, Чехословакия республикаһы премьер-министры А. Запотоцкийҙы, Болгария коммунистәр партияһы Үҙәк Комитетының генеральный секретары В. Червенковты, Болгария халыҡ республикаһы халыҡ йыйылышы президиумы председателе Г. Дамяновты, Венгрия хеҙмәтсәндәр партияһы Үҙәк Комитетының генеральный секретары М. Ракошийҙы, Венгрия халыҡ республикаһы премьер-министры И. Добиҙы, Венгрия халыҡ республикаһы президиумы председателе Ш. Ронаиҙы, Румыния эшселәр партияһы Үҙәк Комитетының генеральный секретары Г. Георгиу-Дежды, Румыния халыҡ республикаһының премьер-министры П. Грозаны, Румыния халыҡ республикаһы бөйөк милли йыйылышы президиумы председателе К. Пархонды, Албания хеҙмәт партияһы Үҙәк Комитетының генеральный секретары Энвер Ходжаны, Албания халыҡ йыйылышы президиумы председателе Омер Нишаниҙы портреттарын күтәреп үтәләр.

Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре социализм юлынан барыусы Польша, Чехословакия, Болгария, Румыния, Венгрия, Албания халыҡтарын ҡотлайҙар.

СССР менән Ҡытай хеҙмәтсәндәре араһындағы ҡаҡшамаҫ дуҫлыҡ һәр көн һайын нығый бара. Үҙ иленең азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон яулап алған һәм уңышлы рәүештә яңы тормош төҙөгән бөйөк Ҡытай халҡы хөрмәтенә ҡотлау һүҙҙәре әйтелгәндә майҙан өҫтөнән көслө ура тауышы яңғырай. Октябрь районы хеҙмәтсәндәре Ҡытай халҡының юлбашсыһы, Ҡытай халыҡ республикаһының Үҙәк хөкүмәте председателе Мао-Цзе-дундың, Государство Административ Советының премьеры Чжоу Энь-лайҙың, Ҡытай коммунистәр партияһы Үҙәк Комитеты секретары Лю Шао-циҙың, Ҡытай халыҡ республикаһының үҙәк хөкүмәте председателе урынбаҫары Чжу Дэ портреттарын күтәргәндәр.

Халыҡ-ара байрам көнөндә совет кешеләре Германия Демократик Республикаһын ҡотлайҙар. Улар шулай уҡ үҙ иленең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн сит ил баҫҡынсыларының ҡоралды интервенцияһына ҡаршы батырҙарса көрәшеүсе азатлыҡ һөйөүсе Корея халҡына туғандарса сәләм ебәрәләр.

Демонстранттар Германия Демократик Республикаһының президенты В. Пикты, Германия Демократик Республикаһы премьер-министры О. Гротевольты, Германияның Социалистик Берҙәм Партияһы Үҙәк Комитетының генеральный секретары В. Ульбрихтты, Корея халыҡ-демократик республикаһының министрҙар Советы председателе Ким Ир Сенды, Корея халыҡ-демократик республикаһының Верховный Халыҡ Йыйылышы президиумы председателе Ким Ду Бонды, Монголия Халыҡ Республикаһы премьер-министры маршал Чойбалсандың портреттарын күтәрәләр.

Демонстранттар шулай уҡ туғандаш партиялар етәкселәренең — Франция халҡының юлбашсыһы М. Торезды, Италия халҡының юлбашсыһы П. Тольяттиҙы, Америка революцион эшселәр синыфының юлбашсыһы У. Фостерҙы, Испания коммунистәр партияһы Үҙәк Комитетының генеральный секретары Долорес Ибаррурины, Англия коммунистәр партияһы Үҙәк Комитеты секретары Г. Поллитты, Вьетнам демократик республикаһы президенты Хо Ши Миндың портреттарын алып баралар.

«Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре! Халыҡтар тыныслыҡты яҡлау эшен үҙ ҡулдарына алһалар һәм уны аҙағынаса яҡлаһалар тыныслыҡ һаҡлап алып ҡалыныр һәм нығытылыр! Тыныслыҡ тарафдарҙарының ҡеүәтле фронтын киңәйтегеҙ һәм нығытығыҙ!» Бөтә Союз Коммунистәр (большевиктәр) партияһы Үҙәк Комитетының был боевой саҡырыуы уйлап сығарылған колонналарға яҙылған.

... Спасск башняһындағы сәғәт [illegible] Уның моңло тауышы байрам [illegible] Ҡыҙыл майҙандан үтеүсе ҡеүәтле [illegible] лар ташҡынының шатлыҡ гөрөлдәүе [illegible] ышла.

Юлбашсының исемен йөрөткән районының хеҙмәтсәндәре иптәш И. В. Сталиндең тормошонан һәм революцион эшмәкәрлегенән айырым моменттарҙы күрһәтеүсе художестволы паннолар күтәреп киләләр.

Майҙанға демонстранттарҙың һаман яңы колонналары ҡала.

Ҡыҙыл майҙан аша бер миллиондан артығыраҡ кеше үтте. Бөйөк башҡаланың хеҙмәтсәндәре партия һәм хөкүмәт тирәһенә үҙҙәренең тупланғанлыҡтарын, Сталинға үҙҙәренең икһеҙ-сикһеҙ көсөн бирҙәрен һәм бирелгәнлектәрен демонстрацияланылар.

Хеҙмәтсәндәрҙең дүрт сәғәт буйы дауам иткән демонстрацияһы кис ҡалды булыу сәбәпле кәнәзе сәғәт 3-тә тамамланды.

(ТАСС).

Өфөлә 1 Май демонстрацияһы. Һүрәттә: Ленин һәм Жданов райондары хеҙмәтсәндәренең колонналары.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Өфөлә байрам көнө

Меӊ туғыҙ йөҙ илле беренсе йылдың— егерменсе быуаттың һуңғы яртыһының тәүге йылы — Беренсе Май көнө.

Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамы алдынан бер нисә көн элек кенә Совет илдәрен бөтә донъялағы дуҫтарын шатландырып, уның дошмандарына тәҫьир итмәү мөмкин булмаған ауыр удар булып, СССР Государство План Комитетенең һәм СССР Үҙәк Статистика Управлениеһының белдереүе иғлан ителгәйне. Тыныслыҡ, демократия һәм социализм өсөн ҡеүәтле көрәштең башында торған Советтар Союзы хеҙмәтсәндәре кешелектең тағы ла яҡтыраҡ киләсәгенә ҙур вклад индерҙе. Коммунистар партияһы етәкселегендә, тыныс ижади хеҙмәт кешеләре һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәнеләр.

Үҙ хеҙмәтенең емештәре менән ғорур булған халыҡ уңыштарҙы тағы ла үҫтереү теләге менән йәшәй һәм байрамға әҙерлек бөтә өлгәшелгәндәрҙе артабан нығытыу билдәһе аҫтында барҙы.

Республикабыҙ башкалаһы предприятиеләрендә көслө тулҡын булып йәйелгән социалистик ярыш яңы көстәрҙе, файҙаланылмаған резервтарҙы производствоға ҡушты.

Байрам көнөнә Өфө ҡалаһы ал байраҡтарға төрөнгәйне. Бина фасадтары бөйөк юлбашсылар В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең портреттары, партия һәм хөкүмәт етәкселәренең портреттары, ВКП(б) Үҙәк Комитетының Беренсе Майға ҡарата саҡырыуҙары менән биҙәлгәйне.

Ҡала иртәһе көслө һәм өҙлөкһөҙ хәрәкәт менән башланды. Эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр, уҡыусылар һәм студенттар дөйөм ҡала демонстрацияһына ағылдылар. Иртәнге 11 сәғәт тулыуға демонстранттар колонналары Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Хөкүмәт Йорто яғына табан юнәлделәр.

Хөкүмәт Йорто алдында В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең ҙур портреттары. Бейек бина өҫтөндә — бөйөк Сталинға дан һүҙҙәре, улар электр лампочкалары менән яҙылғандар.

Демонстрацияны Киров районы мәктәптәренең уҡыусылары башлап ебәрҙе. 3-сө номерлы мәктәптең киң урамды иңләп килгән колоннаһы «Сталинға дан!» тигән һүҙҙәр яҙылған ҙур транспарант алып килә. Уҡыусыларҙың ҡулдарында «Тыныслыҡ өсөн!» тигән һүҙҙәр яҙылған плакаттар, тыныслыҡ символы булған аҡ күгәрсен макеты. Трибуна алдына килеп еткәс менән күккә күгәрсендәр күтәрелә һәм улар бөтә демонстранттарҙы сәләмләп, майҙан өҫтөнән бер нисә тапҡыр әйләнеп осалар. Майҙанда тыныслыҡ һәм уның өсөн бөйөк көрәшсе И. В. Сталин хөрмәтенә көслө ура тауыштары яңғырай...

Майҙанға ҡала хеҙмәтсәндәренең колонналары инә.

— Социалистик ярыш алдынғыларына дан!

Трибуна алдынан беренсе булып Ленин районы колонналары үтә. Был — фиҙакәр хеҙмәт менән яулап алынған хоҡуҡ. Уның өсөн бөтә дүрт район араһында ныҡлы көрәш барҙы, һәм Ленин районы еңеүсе булып сыҡты. Алда — ҡала предприятиеләре араһында Май алды социалистик ярышының инициаторы — электр оборудованиеләре заводы колоннаһы, уның артынан судноларҙы ремонтлау заводы коллективы килә, колонна алдында А. Матросов исемендәге пароходтың макеты. Макеттың алдына «Алға, коммунизмдең еңеүенә» тигән һүҙҙәр яҙылған.

Башҡортостан большевиктар партияһының ихтыяры менән һаман алға бара, үҫә һәм нығый. Уның быуаттар буйына ҡул теймәй ятҡырылған ер аҫты байлыҡтары йылдан-йыл күберәк табыла. Көньяҡ Урал геология Управлениеһе коллективы автомашинаға бораулау машинаһы урынлаштырған, ул автомашина өҫтөндә эшләп бара, шунда уҡ уңыштарҙы күрһәткән һандар күренәләр һәм улар киләсәктә тағы ла күберәк буласаҡтар.

Партия һәм хөкүмәт ҡаланы төҙөкләндереүгә ҙур иғтибар бирәләр, «Баштрест» коллективы колоннаһы быны ошоларҙы сағылдырып биҙәлгәйне.

Совет Армияһына булышлыҡ итеүҙең ирекле общество һының ағзалары үткәндән һуң трибуна алды бер ни тиклем тынып һәм бушап ҡалды.

Бына Башҡорт государство опера театры эргәһендә байраҡтар диңгеҙе тулҡынлана башлай. Был Киров районы хеҙмәтсәндәре колоннаһы.

Районның алдынғы предприятиеләре булған кабель заводы һәм тау оборудованиеләре заводы коллективтары байрамға яҡшы әҙерлек менән килгәндәр. Кабель заводы коллективы дүрт айлыҡ планды срогынан алда үтәгән. Тау оборудованиеләре заводы коллективы алып килгән диаграмма заводтың производство кимәле үҫешен ошондай һандар менән күрһәтә: биш йыллыҡ аҙағына етештереү кимәле, биш йыллыҡтың тәүге йылы менән сағыштырғанда, 110 процентҡа тип әйтерлек үҫкән.

Молотов районының тимер юлсылары, паровоз ремонтлаусылары, йылғасылары артынан беҙҙең эшселәр синыфыбыҙға лайыҡлы өҫтәмә булып торған хеҙмәт резервтары вәкиле — һөнәрселек училищеләренең уҡыусылары үтәләр. Баштан-аяҡ ап-аҡ итеп кейенгән үсмерҙәр тигеҙ сафһәм ныҡлы аҙым менән атлайҙар. Трибунанан буласаҡ квалификациялы эшселәр хөрмәтенә ҡотлау һүҙҙәре яңғырай һәм ул һүҙҙәрҙе көслө «ура» тауыштары күтәреп ала.

Жданов районы хеҙмәтсәндәре колоннаһының башында килеүсе «Башнефть» берекмәһенең диаграммаһында күренгәненсә, нефть эшкәртеүҙең үҫеше, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 1950 йылда 106 процентҡа күберәк тура килә. Республика нефтселәре был көндәрҙә айырыуса ойошҡанлыҡ һәм энергия менән эшләйҙәр. Сөнки улар быйыл да Азербайжан һәм Куйбышев нефтселәре араһында социалистик ярышты дауам иттереү буйынса яңы йөкләмәләр алып, бөйөк Сталинға хат яҙҙылар. Был саҡырыу бөтә илдә хуплау тапты. Башҡортостан нефтселәре республика данын алыҫтарға илтәләр.

Күп һанлы специалистар әҙерләүсе медицина, педагогия һәм ауыл хужалығы институттарының, предприятиеләрҙең һәм учреждениеләрҙең коллективтары үтә.

Демонстрация ике сәғәт ярым дауам итте.

Бөтә халыҡ байрам итте. Демонстрация тамамланыу менән байрам квартираларға, баҡсаларға, тамашасы залдарына күсте. Был көндө кис баҡсалар, Үҙәк культура һәм ял паркы асылды, Башҡорт государство академия драма театрында башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбле ҡатнашлығында яҙғы бал булды. «Октябрь» һәм «Урал» кинотеатрҙарында «Тыныс көндәрҙә» тигән төҫлө яңы кинофильм күрһәтелә башланы.

З. Ишнаев.

Сәсеүҙе һуҙыуға юл ҡуйыу—ул миллионлаған бот игенде юғалтыу

Һәр бер колхоздың һәм совхоздың сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауына өлгәшергә!

☆ ☆ ☆

Сәсеүҙә яңы ысулдарҙы киң ҡулланырға

Культуралы үҫемлектең нормаль үҫеше өсөн аҙыҡланыу майҙаны талап ителә. Улар артыҡ ҡуйы булһалар, бер-береһенә ҡамасаулайҙар, зәғиф булып үҫәләр. Артыҡ ҡуйы үҫкән ашлыҡтарҙың башаҡтары бәләкәй, орлоҡтары ваҡ була. Шулай уҡ артыҡ һирәк сәсеүгә лә юл ҡуйырға ярамай. Һирәк сәсеүлектәрҙе, ғәҙәттә, ҡый үләндәре баҫа һәм ашлыҡтарға үҫеүгә ҡамасаулай. Артыҡ ҡуйы йәки һирәк сәсеү урожайҙың түбән булыуына алып бара.

Бөртөклө культураларҙы ябай теҙмә сәскес менән сәсеү, ғәҙәттә, үҫемлектәр өсөн яҡшы үҫеү шарттарын тәьмин итә алмай. Бында орлоҡ тар рәттәргә һалына, ә рәттәр араһында 13 — 15 сантиметр киңлектәге полоса сәселмәй ҡала.

Теҙмә сәскестең был етешһеҙлектәрен иҫәпкә алып, ауыл хужалығы алдынғылары бөртөклө культураларҙы сәсеүҙә арҡыры-буй һәм тар рәтле сәсеү ысулдары ҡулланалар.

Арҡыры-буй һәм тар рәтле сәсеү ысулдары, ябай рәүештә теҙмә сәсеүгә ҡарағанда, һәр бер үҫемлек өсөн аҙыҡланыу майҙанын ике тапҡырға арттырырға мөмкинлек бирә. Тар рәтле теҙмә сәскес менән арҡыры-буй сәсеүҙең һөҙөмтәһе тағы ла яҡшыра. Был ысулда сәсеү, ябай теҙмә сәскес менән сәсеүгә сағыштырғанда, һәр бер үҫемлек өсөн аҙыҡланыу майҙанын дүрт тапҡырға арттыра.

Арҡыры-буй сәсеү эше ат менән йөрөтелә торған ябай теҙмә сәскес һәм трактор сәскесе менән буйға һәм арҡырыға йөрөтөп үткәрелә. Бында буйға йөрөүҙә гектар нормаһының яртыһы һәм арҡырыға йөрөүҙә икенсе яртыһы сәселә. Тар рәтле итеп сәсеү өсөн етен сәскесен йәки ат йөрөтә торған сәскесте ҡулайлаштырып файҙаланырға мөмкин. Бының өсөн атлы сәскестең рәттәре ике тапҡырға тарайта төшөлә. Ул түбәндәгесә эшләнә: сәсеүсе аппараттың һәр бер катушкаһы аҫтына өҫтәмә рәүештә орлоҡ төшөргөс ҡуйылған берәр сошник йәки диска беркетелә. Бында сәсеүсе аппараттағы орлоҡтарҙың сошниктар һәм дискалар араһында тигеҙ бүленеүенә ныҡ иғтибар итергә кәрәк. Быға шулай уҡ аллы-артлы ике сәскесте йөрөтеү менән дә өлгәшеп була. Бында арттағы сәскестең сошниктәре алдағыһының рәттәре араһынан алып барыла. Шулай уҡ бында сәскестәр яртышар норма менән сәсәләр.

Арҡыры-буй һәм тар рәтле ысулды ҡулланғанда сәсеү нормаһы 15 — 20 процентҡа арттырыла. Норманы, һәр гектарға тейешле булған шытымлы орлоҡ талабынан сығып билдәләү тағы ла яҡшыраҡ.

Сәсеү эшендәге был алдынғы ысулдарҙы һәр бер колхозда, беренсе нәүбәттә, бойҙай, һоло орлоҡсолоғо участкаларында ҡулланырға кәрәк. Эш яҡшы эшкәртелгән тупраҡта, иң яҡшы агротехник сроктарҙа, иң яҡшы сортлы, яровойлаштырылған орлоҡ менән үткәрелергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта гранул ашламаларын бергә сәсеү сараларын күреү талап ителә.

Ауыл хужалығы алдынғылары көнбағыш, йәшелсә һәм башҡа пропаш культуралар сәсеүҙә квадрат оялы ысулда сәсеүҙе киң ҡулланалар. Ул шунан тора: орлоҡ бер-береһенән бер тигеҙ алыҫлыҡта ояларға сәселә. Был, сәсеүлектә рәт араларын баҫыуҙың буйына ла һәм арҡырыһына ла эшкәртеүҙе максималь механизациялаштырырға мөмкинлек бирә. Былай эшләгәндә сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү сроктары тиҙләтелә һәм урожай кимәле юғары була.

Быйыл республикабыҙҙа беренсе тапҡыр Дәүләкән, Бүздәк, Ауырғазы һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың күпселек колхоздары СШ—6 маркалы шахматлы махсус сәскес менән квадрат-ояльы ысулда көнбағыш сәсергә тейештәр. Трактор менән йөрөтөлә торған СШ—6 маркалы алты рәтле сәскес көнбағышты ояләп сәсә, һәр бер ояға 2—4 бөртөк орлоҡ һала. Оялар баҫыуҙың буйына ла, шулай уҡ арҡырыһына ла 70 сантиметр аралыҡлы рәттәрҙә урынлашалар. Был ысул менән сәсеүҙең өҫтөнлөгө шунда тора: орлоҡ материалына экономия яһала, һәр гектарға 5 килограмм самаһы көнбағыш сәселә, тәрбиәләү еңеләйә. Бында сәсеүлектә көнбағыш үҫентеләрен һирәкләүҙе үткәреү талап ителмәй. Сөнки улар тейешле алыҫлыҡта сәселгән булалар. Рәт араларында тупраҡты эшкәртеүҙе механизациялаштырырға мөмкин.

Республикабыҙҙың МТС-тары быйыл 200-ҙән күберәк СШ—6 маркалы сәскес алалар. Дәүләкән, Бүздәк һәм башҡа райондарҙың МТС-тары был яңы машиналарҙы файҙаланыуға яҡшы әҙерләнделәр. Ләкин, Әлшәй, Миәкә, Йәрмәкәй райондарының МТС-тары уларға бирелгән яңы сәскестәрҙе сельхозснабтың Раевка бүлексәһенән барып алмай ятҡырала.

Картоф һәм йәшелсәләрҙе квадрат-ояльы ысулда ултыртыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Был ысулды ҡулланыу өсөн тупраҡ яҡшы итеп эшкәртелергә тейеш. Ултыртыу алдынан участкала рәттәрҙең юл һыҙыҡтарын билдәләү үткәрелә. Ул буйға ла һәм арҡырыға ла була. Һыҙыҡтарҙың аралыҡтары, рәт аралары трактор менән эшкәртелә торған булғанда, 70-әр сантиметр, ә ат менән эшкәртергә булғанда 60-ар сантиметр киңлектә булдырыла. Картоф бураҙнаның уңлыҡтағы кәҫ тупрағына, 8 — 10 сантиметр тәрәнлектә, арҡыры яҡтан һыҙыҡтың ике яғына берәр дана ултыртыла. Картофты ултыртыу менән бер үк ваҡытта, участка тырматыла. Ултыртыу өсөн ҡулланылған картофтың орлоғо кәмендә 60 — 70 грамм ауырлыҡта булыуы шарт.

Колхоздарҙың эреләтелеүе прогрессив методтарҙы киң ҡулланыу өсөн ҙур мөмкинлектәр тыуҙырҙы. Сәсеү һәм тәрбиәләү эштәрен механизациялаштырыу менән башҡарыла торған был ысулдар колхоздарҙа киң ҡулланылырға тейеш.

Агроном Ғ. Әшимов.

☆

Башкорт АССР-ы колхоздарында яҙғы баҫыу эштәре барышы*)

(План үтәлеше 1951 йылдың 1 Майына процентторҙа)

Райондар	Ашлыҡ сәселгән	Ағас ултыртылған	Ужым тырматылған	[illegible]
Хәйбулла	88,4	55	74	9
Йомағужа	85,9	63	61	96
Әбйәлил	74,3	48	59	38
Зианчура	73,0	71	93	52
Туймазы	72,4	100	100	79
Маҡар	72,3	—	77	55
Ҡандра	71,6	83	86	49
Дәүләкән	70,9	39	91	68
Баймаҡ	70,3	16	42	—
Шишмә	70,1	58	70	50
Стәрлетамаҡ	69,0	64	14	25
Күгәрсен	66,6	63	99	20
Бүздәк	66,5	77	68	46
Матрай	65,0	45	73	26
Благовар	64,9	47	24	26
Ғафури	64,1	18	31	51
Абзан	62,3	77	59	8
Балтач	60,6	52	38	10
Стәрлебаш	60,4	88	78	39
Миәкә	58,6	50	58	20
Өфө	57,7	68	84	29
Учалы	57,6	42	62	5
Янаул	56,9	70	51	40
Ҡыйғы	56,3	—	42	28
Дүртөйлө	56,2	77	105	15
Воскресен	53,5	50	54	26
Әлшәй	53,2	37	107	34
Саҡмағош	52,2	100	58	30
Шаран	51,2	96	63	37
Ауырғазы	51,0	48	67	29
Ҡейөргәзе	50,8	53	67	10
Илеш	50,8	60	60	19
Мәләүез	50,3	32	61	39
Архангель	48,5	—	54	30
Борай	47,7	54	48	8
Бөзәйәҙ	46,8	83	58	21
Йәрмәкәй	45,6	66	42	24
Нуриман	45,2	—	27	46
Белорет	44,8	—	9	21
Покровка	44,7	—	49	11
Мишкә	44,5	70	40	9
Ҡырмыҫҡалы	43,7	53	62	9
Федоровка	43,1	50	31	12
Салауат	42,9	—	34	17
Тәтешле	42,9	—	40	42
Баҡалы	42,1	62	51	20
Бөрө	41,5	54	59	5
Йылайыр	40,6	—	21	—
Бишбүләк	40,4	60	10	25
Благовещен	40,0	117	44	20
Бәләбәй	37,5	35	41	15
Белоҡатай	36,4	—	39	6
Аҫҡын	35,1	—	51	27
Оло Теләк	34,3	—	12	44
Байҡыбаш	33,7	—	22	30
Ҡариҙел	33,1	—	24	25
Ҡалтасы	32,6	57	66	22
Иглин	31,3	58	52	26
Кушнаренко	30,7	50	22	12
Бөрйән	29,0	—	23	—
Дыуан	27,8	—	45	—
Мәсетле	25,3	—	62	1
Краснокай	20,5	45	38	3
Октябрьский ҡалаһы	39,3	—	—	—

*) Райондарҙың тотҡан урыны сәсеү буйынса билдәләнелә.

Колхоздар менән төҙөгән договор үтәлмәй

Әлшәй районы колхоздарында массовый рәүештә баҫыу эштәре башланыуға ун көндән артыҡ ваҡыт үтте. Хәҙер бөтә көс яҙғы сәсеүҙе юғары агротехника нигеҙендә, ҡыҫҡа срокта тамамлауға тупланып, һәр көн, һәр сәғәт эштә тулы файҙаланырға тейеш.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Әбдрәшит МТС-ы етәкселәре яҙғы баҫыу эштәренең агротехник сроктары менән бөтөнләй иҫәпләшмәйҙәр. Бына «Пятилетка» колхозы. Ул Әбдрәшит МТС-ы зонаһында иң эре хужалыҡтарҙың береһе. Колхоз быйыл лә көнә 2300 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары сәсеүҙе планлаштырҙы. Колхоз менән төҙөшкән договор буйынса МТС-тың был колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Колниченко етәкселек иткән трактор бригадаһы ике-өс көн эсендә көҙҙән туңға һөрөп ҡалдырылған 500 гектар ерҙе, 200 гектар ужым культураһын тырматыуға, 8 эш көнендә 1500 гектар майҙанда иртә культуралар сәсеү үткәрергә, 900 гектар ер һөрергә тейеш ине. Тракторҙар менән генә һәр көн кәм тигәндә 190—200-әр гектар ашлыҡ сәсергә кәрәк. Бригадаға көндәлек эш нормаһын үтәү генә түгел, ә арттырып үтәүгә мөмкинлек бар. Сөнки бригадаға 2 С—80 тракторы, 2 СТЗ—НАТИ һәм тәгәрмәсле өс трактор беркетелгән. Колхоз тарафынан бригаданы хеҙмәтләндереү өсөн тейешле кешеләр, аттар бүленгән, эш өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған. Бында 14 апрелдә үк баҫыу эштәрен бөтә киңлегенә йәйелдерергә мөмкин ине. Ләкин бында бөгөнгә көнгә тиклем баҫыу эштәре массовый төҫ алғаны юҡ. Тракторҙар колхозға тик 15 апрелдә генә килтерелде. Икенсе көндө машиналарҙы эш урындарына илтеү менән ваҡыт үтте. С—80 һәм бер СТЗ—НАТИ тракторы насар ремонтланғанлыҡтан тәүге гектарҙарҙы һөрөп тырматҡанда уҡ ватылды. Тракторист иптәш Николенко 43-сө номерлы СТЗ—НАТИ тракторын хатта баҫыуға ла алып барып еткермәне, ватылды. Трактористар уны яңынан ремонтҡа ҡуйҙылар. Иптәш Нестеренко эшләгән С—80 тракторының радиаторы ярыҡ, унан туҡтауһыҙ һыу ағып тора.

— Нигә ремонтланмаған ватыҡ тракторҙарҙы колхозға алып килдегеҙ һуң, — тигәс:

— Был тракторҙарҙы ремонтлағанда беҙ ҡатнашманыҡ. Үҙған йыл беҙ ЛЭС-та эшләнек. Биргәс алдыҡ инде, — тиҙәр тракторист Николенко һәм Михайлов иптәштәр.

МТС директоры иптәш Мөхәмәтовҡа лә, МТС-тың өлкән механигы иптәш Сенной-ға ла тракторҙарҙың эшкә башлай алмауҙары тураһында өҙлөкһөҙ сигналдар килеп тора. Ләкин улар эште тиҙерәк юлға һалыу тураһында конкрет сара күрмәйҙәр. Ошо ваҡытҡа тиклем МТС-та булған 3 күсмә мастерскойҙың береһенә лә ремонт тамамланмаған, улар әле булһа ватыҡ килеш усадьбала ултыралар. МТС-тың участка механиктары лә, өлкән механигы иптәш Сенной ҙа урындарға сығып трактор бригадаларына практик ярҙам күрһәтеү урынына әле һаман яйлап ҡына күсмә мастерскойҙарҙың ремонтланғанын көтәләр.

— Бына ошо көндәрҙә берәр күсмә мастерскойға ремонт яһап бөтә алһаҡ, унан трактор бригадаларына сыҡҡалай башларбыҙ инде, — ти тыныс ҡына иптәш Сенной.

Тракторҙарҙы сифатһыҙ ремонтлаған көйөк уҡ, Әбдрәшит МТС-ы ҡыш көнө механизатор кадрҙары әҙерләү менән дә бик насар шөғөлләнде. Шунлыҡтан хәҙер МТС-та трактористар етешмәй. Шул уҡ «Пятилетка» колхозында ғына ла әле булһа трактор бригадаһы тейешле кадрҙар менән комплектовать ителмәгән. Партия һәм хөкүмәттең был турала махсус ҡарары булыуға ҡарамаҫтан, ВКП(б)-ның Әлшәй район комитеты лә, МТС етәкселәре лә был бригаданы комплектовать итеү тураһында ваҡытында ҡайғыртманылар. Бригадаға яңынан алты тракторист талап ителә. Трактористар булмағанлыҡтан ғына ремонттан сығарылған тәгәрмәсле 2 трактор «Пятилетка» колхозында 17 апрелдән бирле файҙаланылмай ултыра. Ваҡыт көтмәй, сәсеүҙең иң яҡшы агротехник сроктары көн һайын уҙа бара. Был колхозда ни бары 271 гектар майҙанда тырматыу, 131 гектар майҙанда культивация уҙғарылған, 92 гектар ер һөрөлгән, ни бары 5 гектар ғына ашлыҡ сәселгән. Ер һөрөүҙә эштең сифатына иғтибар бирелмәй. Тракторист иптәш Нестеренко 7 гектар ерҙе предплужникһыҙ һабандар менән, ер баштарында сей ҡалдырып һөргән.

МТС етәкселәре «Трудовик» колхозына 2 СТЗ—НАТИ һәм тәгәрмәсле 2 трактор ебәргәндәр ҙә, тынысланғандар. Ә сәскестәр тураһында «онотҡандар». Сәскес булмағанлыҡтан тракторҙар эшләмәй ултыралар.

«Тау-Күл» колхозын хеҙмәтләндереүсе иптәш Хәбиров етәкселек иткән 1-се номерлы трактор бригадаһында ла баҫыу эштәре бик аҡрын темп менән бара. Был колхозда эшләргә тейешле булған С—80 тракторына ремонт һаман тамамланмаған, ә СТЗ—НАТИ һәм тәгәрмәсле ике трактор яҡтылыҡ менән тәьмин ителмәгән. Шуға күрә улар төндә бөтөнләй эшләмәйҙәр.

МТС етәкселәре баҫыу эштәрендәге был хаталарҙы ашығыс бөтөрергә һәм эшкә оператив етәкселек итергә бурыслылар.

Ғ. Ғәйнетдинова.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

ҠЫҪҠА СРОКТА

Учалы районы колхозсылары Беренсе Май байрамын ҙур хеҙмәт күтәренкелеге менән ҡаршыланылар. Районның алдынғы колхоздары был көндө иртә культуралар сәсеү эшен тамамлау менән билдәләнеләр.

«Совет» колхозы сәсеүҙе 29 апрелгә тамамланы. Был колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Дәүләтбаев етәкселек иткән трактор бригадаһы сәғәт графигы буйынса эшләп, яҙғы баҫыу эштәрен срогынан алда үтәне һәм 800 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

М. Хәйҙәров.

Черниковскиҙа 1 Май демонстрацияһы

Черниковск хеҙмәтсәндәренең 1 Май демонстрацияһы быйыл үҙған йылдарға ҡарағанда ҡеүәтлерәк һәм күңеллерәк үтте.

ВКП(б) ҡала комитеты бинаһы алдындағы майҙанға хеҙмәт резервтары колоннаһы беренсе булып килә. Иркен хеҙмәткә ынтылыусы йәш көстәрҙең тығыҙ сафтарында бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең бөйөк юлбашсыһы И. В. Сталин хөрмәтенә көслө ура тауыштары яңғырай. Уларҙы мәктәп уҡыусыларының колонналары алмаштыра. Бәхетле совет йәштәренең шат колонналары өҫтөндә партия һәм хөкүмәт етәкселәренең портреттары. Улар трибуна алдынан үткәндә бәхетле балалыҡ өсөн Совет хөкүмәтенә һәм һөйөклө Сталинға рәхмәт һүҙҙәре әйтәләр.

Бына нефть эшкәртеүселәрҙең ғорур көстәре килә. Колонналағы транспаранттарҙа байрам алды ярышының йомғаҡтары сағылдырылған. Коллектив апрель айының производство планын 104 процентҡа үтәгән. Унан һуң химия заводы, төҙөүселәр коллективтары, электр лампалары заводы, шырпы фабрикаһы, фанера комбинаты һәм башҡа предприятиеләрҙең коллективтары үтәләр. Улар бөтәһе лә Май алды социалистик йөкләмәләрен арттырып үтәнеләр.

Черниковск хеҙмәтсәндәренең ике сәғәт ярым буйына дауам иткән демонстрацияһы совет халҡының бөтә донъяла тыныслыҡты яҡлауға, тыныс хеҙмәттең яңы уңыштарына әҙер торғанлығын сағылдырҙы.

М. Мостафин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Өфөлә 1 Май демонстрацияһы. Һүрәттә: Молотов районы хеҙмәтсәндәре колонналары трибуна алдынан үтәләр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Алдынғы һаҡлыҡ кассаһы

Молотов районының Үҙәк һаҡлыҡ кассаһы коллективы (Өфө ҡалаһы) үҙенә йөкмәтелгән бурысты намыҫлы үтәп килә. Ул үткән йыл ике тапҡыр Башҡорт АССР-ының иң яҡшы кассалары исемен яулап алғайны. Һәм быйыл да коллектив фиҙакәр эшләп, республикабыҙҙың финанс системаһында алдынғылар сафында бара. Аҡса туплау пландарын систематик үтәүе менән бергә, заем облигациялары тотоусыларҙы һәм вкладчиктарҙы культуралы хеҙмәтләндерә.

Коллективтың уңышлы эшләүенең сере — район партия, совет ойошмаларының оператив етәкселегендә, хеҙмәтсәндәр араһында киңдәлек эш алып барыуҙа, Үҙәк һаҡлыҡ кассаһының эшендә тәүге партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының ҙур булышлыҡ күрһәтеүҙәрендә.

Тик һуңғы ике ай эсендә генә, йәғни һаҡлыҡ кассаларының һәм комсодтарҙың эшенә общественный смотр ваҡытында тына районлыҡ хеҙмәтсәндәре араһында йөҙҙән артыҡ доклад һәм бер нисә йөҙ беседа үткәрелде. Был докладтар һәм беседалар илебеҙҙең халыҡ хужалығын үҫтереүҙә государство заемдарының тотҡан әһәмиәтенә арналдылар.

Урындағы партия ойошмаларының ярҙамында башҡа күп кенә ойоштороу-массовый саралары тормошҡа ашырыла. Мәҫәлән, предприятиеларҙағы профсоюз комитеттары һәм комсод председателдәре менән, финанс активистары менән кәңәшмәләр үткәрелә. Общественный смотр осоронда йөҙҙән артыҡ комсод үҙенең эшләгән эше буйынса хеҙмәтсәндәр алдында отчет яһаны.

Үҙәк һаҡлыҡ кассаһының инициативаһы менән предприятие һәм учреждениелар эргәһендә ойошторолған йөҙҙән артыҡ белешмә өҫтәлдәре эшләй. Улар заем отоштарын тикшереү менән бергә, хеҙмәтсәндәргә государство заемдарының һәм вкладтарҙың әһәмиәте тураһында аңлаталар. Һуңғы ике ай эсендә генә районда һиғеҙ меңгә яҡын кешенең облигациялары тикшерелеп, уларға 84 мең һум отош түләнде. Был ваҡыт эсендә һаҡлыҡ кассаларына ярты миллион һумдан күберәк суммала яңы вклад ылыҡтырылды һәм вкладчиктар һаны ес йөҙ алтмыш ес кешегә үҫте.

Ҙур ойоштороу-массовый сараларын үткәреү арҡаһында район смотр шарттарын уңышлы үтәүгә өлгәште. Үткән йылғы заем буйынса подписчиктар менән иҫәпләшеү срогында тамамланды һәм бөтә подписчиктарға лә облигациялары үҙ ваҡытында тапшырылды. Шуны әйтергә кәрәк, Үҙәк һаҡлыҡ кассаһы СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Бишенсе государство заемын бюджет суммаһынан байтаҡ арттырып урынлаштырып, ҡала һаҡлыҡ кассалары араһында беренсе урынды алғайны.

Үҙәк һаҡлыҡ кассаһының коллективы (мөдире иптәш Г. Хәликова) үҙенең бөтә массовый эшен общественный ойошмалар менән тығыҙ бәйләнештә үткәрә. Ул үҙе тирәһенә финанс активы туплаған.

Заем облигациялары тотоусыларҙы һәм вкладчиктарҙы хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу маҡсатында Үҙәк һаҡлыҡ кассаһы үҙенең работниктары менән регуляр производство кәңәшмәләрен үткәреүҙе ойошторған. Ул кәңәшмәләрҙә алдынғы работниктарҙың эш тәжрибәләре менән уртаҡлашыла. Ағымдағы мәсьәләләргә ҡарата систематик беседалар алып барыла, ҡысҡырып газеталар уҡыла. Бынан тыш техник түңәрәк эшләй. Быларҙың бөтәһе лә һаҡлыҡ кассаһының работниктарына үҙҙәренең эш квалификацияһын һәм культура кимәлен күтәреүҙә, вкладчиктарҙы культуралы хеҙмәтләндереүгә булышлыҡ итә. Бында иҫәп-хисап эштәре лә яҡшы ҡуйылған. Шуға күрә һаҡлыҡ кассаһының эшенә ҡарата хеҙмәтсәндәр тарафынан бер генә жалоба ла юҡ. Отчеттар срогынан алда тапшырылалар.

Үҙәк һаҡлыҡ кассаһының бүлексәләренән В. Зиняева, Е. Иванова, Ф. Сабирова иптәштәр етәкселек иткән кассаларҙың эш күрһәткестәре айырыуса яҡшы. Улар үткән кварталдың заданиеларын байтаҡ арттырып үтәнеләр.

Коллективта һәр бер работник үҙ өҫтөнә социалистик йөкләмә алған һәм шул йөкләмәһен үтәү өсөн намыҫлы көрәшә. Социалистик ярышты киң йәйелдереү нигеҙендә был коллективтың тағы ла яҡшыраҡ күрһәткестәргә өлгәшәсәгендә шикләнмәҫкә мөмкин.

Г. Әмир.

ӘБЙӘЛИЛ РАЙОНЫНДА

Ҙур отоштар

1951 йылда район һаҡлыҡ кассаһы заем облигациялары тотоусыларға 49800 һум отош аҡсаһы түләне.

ВКП(б) райкомы пропагандисы Хәкимов 25 мең һум, «Путь к коммунизму» колхозы члены Азанов 6600 һум һәм Сталин исемендәге колхоз члены Сидоров 5 мең һум отты.

Китап фонды арта

Район үҙәгендәге библиотеканың китап фонды йылдан-йыл арта. Хәҙер унда китап һаны 9 меңгә һәм уҡыусылар һаны 1100-гә етте.

„Колхозник" спорт обществолары

Районда «Колхозник» спорт обществолары [illegible] 16 [illegible] 900-гә яҡын [illegible]

Эрeләтелгән колхозда яңы төҙөлөштәр

Сталин исемендәге эрeләтелгән колхоз быйыл төҙөлөш эштәре буйынса клуб, колхоз канцелярияһы, колхозсылар өсөн 20 торлаҡ йорто, 500 тонна [illegible] суҫкалар һәм ҡоштар торлары һалыуҙы планлаштырҙы. Колхозда [illegible] эксплуатацияға бирелде.

Маҡтаулы йылҡы карауысы

Совет Армияһының элекке кавалеристы [illegible] 20 йыл [illegible] колхозда [illegible] дәге колхозда йылҡы ҡарай. Ул өшө ваҡыт эсендә колхозға меңдән артыҡ колон үҫтереп бирҙе.

Ә. Йәғәфәров.

Сит илдәрҙә 1 Майҙы байрам итеү

Беренсе Май — ер шары хеҙмәтсәндәренең халыҡ-ара солидарлығының һәм туғанлашлығының бөйөк байрамы — быйылғылай бер ваҡытта ла шатлыҡлы, тантаналы һәм тәьҫирле булманы! Һәм был аңлайышлы ла: хеҙмәт кешеләре тарихта бер ваҡытта ла әле үҙҙәрен берҙәм, тупланған һәм еңелмәҫлек көс итеп тойманылар. Беренсе Май көнө хеҙмәтсәндәр өсөн һәр ваҡытта боевой смотр көнө, көрәш йомғаҡтарын яһау көнө булып тора. Халыҡ-ара пролетариаттың, бөтә донъялағы изге теләкле кешеләрҙең үткән юлдарына ҡарау өсөн бик күп нәмә бар. Былтыр улар кешелектең иң изге байлығы — тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн көрәштә ғайәт ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Төрлө расалы, милләттәге һәм тән төҫтәре төрлө булған, төрлө профессияларҙағы һәм ҡараштарҙағы ярты миллиардтан артығыраҡ кеше Стокгольм Воззваниеһына ҡул ҡуйып, һуғышҡа «юл ҡуймаясаҡбыҙ» тинеләр.

Беренсе Май байрамына әҙерлек бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәште тағы ла күберәк киңәйтеү лозунгыһы аҫтында үтте. Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә күп селек илдәрҙә 1 Майға беренсе йөҙ меңләгән ҡултамғалары йыйналғайны ла инде. «Тыныслыҡ Пактын төҙөүҙе талап итәбеҙ!» — был лозунг халыҡ демократияһы илдәрендә һәм Германия Демократик Республикаһында демонстранттарҙың Беренсе Май колонналары өҫтөндә елберҙәне. Реакцион хөкүмәттәрҙең янауҙарына һәм полицияның ҡоторонмоуҙарына ҡарамаҫтан Париж һәм Рим, Нью-Йорк һәм Лондон, Вена һәм Токио, Джакарта һәм Стокгольм, Сант-Яго һәм Дели һәм капиталистик илдәрҙәге йөҙәрләгән башҡа ҡалаларҙың эшселәре уны үҙҙәренең байраҡтарында алып барҙылар.

Беренсе Май демонстрациялары ҡеүәтле Советтар Союзы тарафынан етәкселек ителгән тыныслыҡты яҡлаусылар лагеренең һуңғы йылда ни тиклем үҫеп бөтөргәнен үҫкәнлеген күрһәттеләр. Ер шарындағы ябай кешеләрҙен уйҙары һәм тойғолары был көндә бөйөк социализм иленә, демократия һәм тыныслыҡтың ныҡ ҡаҡшамаҫ таянысына, халыҡтарҙың һөйөклө уҡытыусыһы һәм юлбашсыһы, бөйөк Сталинға йүнәлтелгәйне. Советтар Союзында һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡты уңышлы үтәү тураһында байрамға тиклем бер нисә көн элек иғлан ителгән белдереү Беренсе Майҙы байрам итеүгә айырыуса шатлыҡлы характер бирҙе. Совет халҡының яңы бөйөк еңеүе бөтә донъя эшсән[illegible]

[illegible]

Империализм [illegible] ысҡынып, Польша, Чехословакия, Венгрия, Болгария, Румыния, Албания халыҡтары Советтар Союзы ярҙамында уңышлы рәүештә социализм нигеҙен һалалар. Ныҡлы һәм героик көрәштә үҙ азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап алып ҡалған бөйөк Ҡытай халҡы совет державаһының туғандарса ярҙамына таянып, яңы тормош төҙөй. Халыҡ демократияһы илдәренең эшсәндәре станок янында йәки баҫыуҙа эшләп, үҙ халҡының тормошон яҡшыртыу ғына түгел, бәлки тыныслыҡ һәм демократия лагерен нығытыуҙарын да, һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы көрәшеүҙәрен дә асыҡ аңлайҙар. Бына шуға күрә лә был илдәрҙә киң йәйелдерелгән хеҙмәт ярышы эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең уйҙарында тыныслыҡ өсөн көрәш менән ныҡ бәйләнгән. «Тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыуға мин үҙем нәмә менән булышлыҡ итә алам?» тип һәр-кем үҙ-үҙҙәренән ябай кешеләр, һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһында, Польшала, Чехословакияла, Венгрияла, Болгарияла, Румынияла, Албанияла, Монголия Халыҡ Республикаһында, Германия Демократик Республикаһында Беренсе Майға күтәренке производство йөкләмәһен алмаған бер генә кеше лә булманы.

Бөйөк байрамға арналған йыйылыштарҙа һәм митингеларҙа хеҙмәтсәндәр үҙ өлгәшеүҙәренә ғорурлыҡ менән йомғаҡ яһанылар, ә Беренсе Майҙа шатланып һәм берҙәм булып демонстрацияға сыҡтылар. Пекин, Варшава, Прага, София, Бухарест, Будапешт, Тирана, Улан-Батор, Берлин быйылғылай ҙур һәм матур 1 Май демонстрацияларын бер ваҡытта ла күргәндәре юҡ ине әле.

Ҡытай Халыҡ Республикаһының байрамса биҙәлгән башҡалаһы — Пекинда демонстрацияла 600 меңдән артығыраҡ кеше, Шанхайҙа 2 миллиондан артығыраҡ кеше ҡатнашты. Демонстранттар колонналары өҫтөндә — байраҡтар диңгеҙе, Маркс, Энгельс, Ленин һәм Сталин, Ҡытай Халыҡ Республикаһының партия һәм хөкүмәт етәкселәренең: Мао Цзе-дун, Чжу Дэ, Лю Шао-ци, Чжоу Энь-лай, шулай уҡ башҡа илдәрҙең коммунистик һәм эшселәр партиялары етәкселәренең портреттәре. «Пәшәһен Бөйөк Советтар Союзы менән Ҡытай халыҡтарының ҡаҡшамаҫ дуҫлығы!» — был лозунгты демонстранттарҙың һәр бер колоннаһында күрергә мөмкин ине.

Беренсе Май көнөндә Ҡытай хеҙмәтсәндәре, бөтә прогрессив кешелек донъяһы кеүек үк, азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ өсөн, империалистик агрессорҙарға ҡаршы ҡулдарына ҡорал тотоп көрәшеүсе Кореяның героик халҡы менән туғандарса солидарлыҡ белдерҙеләр.

[illegible]

башҡалаһы — Праганың байрамса биҙәлгән урамдарына һәм майҙандарына йөҙәр меңләгән хеҙмәтсәндәр тулды. В. И. Ленин, И. В. Сталин, Чехословакия коммунистар партияһы һәм хөкүмәте етәкселәренең портреттарын күтәргән демонстранттар колонналары иртән иртүк Вацлава майҙанына йыйнала башланы. Президент Клемент Готвальд хеҙмәтсәндәргә ҡотлау телмәре менән мөрәжәғәт итте: «Бынан бер нисә көн элек, — тине ул, — биш йыллыҡ пландың күтәренке бурыстары 1951 йылдың I кварталында 100,7 процентҡа үтәлде, тип хәбәр ителгәйне. Чехословакияла промышленность производствоһының күләме быйыл I кварталда, үткән йылдың шул уҡ осорона сағыштырғанда, 13 процентҡа артыҡ булды».

Прага халҡының байрам демонстрацияһы 3 сәғәттән артығыраҡ дауам итте; унда 400 меңдән ашыуыраҡ кеше ҡатнашты. 1 Май көнөндә Чехословакия хеҙмәтсәндәре тыныслыҡты нығытырға, гүзәл киләсәкте — социализм төҙөргә үҙҙәренең ҡаҡшамаҫ ынтылыштарын демонстрацияланылар.

Румыния башҡалаһы Бухарестә Беренсе Май демонстрацияһы башланыр алдынан Генералиссимус Сталин исемендәге майҙанда И. В. Сталиндең мәһабәт скульптураһын асыу тантанаһы булды. Байрам демонстрацияһын Бухарест предприятиеларының производство алдынғылары колоннаһы асты. «23 август» исемендәге завод коллективы үҙенең Беренсе Май транспаранттарына Беренсе Май хөрмәтенә алынған социалистик йөкләмәләрҙе срогынан алда үтәү тураһында рапорт яҙғайнылар. Завод апрель планын срогынан алда үтәне, государствоның 11 миллион һум тирәһе аҡсаһына экономия яһаны. Башҡаланың башҡа предприятиеларының коллективтары лә Беренсе Май йөкләмәләрен уңышлы үтәү тураһында рапорт бирҙеләр.

София хеҙмәтсәндәре тыныс хеҙмәттә, социализм төҙөүҙә үҙ уңыштарын демонстрациялау өсөн 1 Май көнөндә байраҡтар, Ленин һәм Сталин, Болгария компартияһы һәм хөкүмәте етәкселәренең портреттарын күтәреп урамдарға сыҡтылар. Күп кенә лозунгыларҙа һәм плакаттарҙа: «Тыныслыҡ, хеҙмәт, социализм» тигән һүҙҙәр яҙылған. Болгария хеҙмәтсәндәре Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә берҙәм ҡул ҡуйып, тыныслыҡ эшен һаҡлап алып ҡалырға ныҡлы әҙер тороуҙарын белдерҙеләр. Болгарияның 5 миллиондан артығыраҡ гражданы был Мөрәжәғәткә үҙенең ҡултамғаһын ҡуйҙы.

Варшава хеҙмәтсәндәренең Беренсе Май демонстрацияһы ғәйәт ҙур һәм матур булды. Унда Польша башҡалаһының 400 меңдән артығыраҡ кешеһе ҡатнашты.

Германия Демократик Республикаһының [illegible]

Немец патриоттарына — Көнбайыш Берлин халҡына Беренсе Майҙы тыныслыҡ өсөн, Германияның берҙәмлеге өсөн көрәш көнө итеп байрам итергә *полиция терроры ҡамасаулыҡ итә алманы.*

1951 йылдың Беренсе Май байрамында капиталистик илдәрҙең хеҙмәтсәндәре [illegible] бөтә изге теләкле кешеләрҙең тыныслыҡ өсөн көрәш байрағы тирәһенә туплаусылығының һәм халыҡ-ара солидарлығының бөйөк көсөн демонстрацияланылар. «[illegible]раллаштырыуҙар артынан ҡыуыуға сик ҡуйырға!», «Америка оккупанттары, Франциянан китегеҙ!», «Беҙ Тыныслыҡ Пактын төҙөүҙе талап итәбеҙ!», «СССР-ға һәм халыҡ демократияһы илдәренә ҡаршы француз халҡы һуғышмаясаҡ, бер ваҡытта ла һуғышмаясаҡ!» тигән лозунгылар аҫтында Париждың бөтә хеҙмәтсән халҡы тиерлек 1 Май көнөндә урамдарға сыҡты.

Франция реакцияһы Париж пролетариатының 1 Май демонстрацияһын [illegible] провокациялар юлы менән өҙөргә маташты. Ләкин полиция таяҡтары демонстранттар колонналары өҫтөнә [illegible] антикоммунистик листовкалар [illegible] самолеттарҙың осоуҙары ла Париж хеҙмәтсәндәренең боевой рухын һындыра алманылар. Франция башҡалаһында 1 май демонстрацияһы 6 сәғәт самаһы дауам итте. «Быйыл Париждә Беренсе Май демонстрацияһы, — тип яҙа «Юманите» газетаһы, — элек булған [illegible] демонстрациялар менән сағыштырырға ярамай. Быйылғы демонстрация үҙенең ҙурлығы һәм ҡеүәте [illegible] шулай уҡ төрлө профсоюз ойошмаларына ингән хеҙмәтсәндәр тарафынан күрһәтелгән әлегә тиклем булмаған берҙәмлек яғынан да айырылып тора». Шулай уҡ Марселдә, Бордола, Руанда, Лиллдә һәм *Францияның* башҡа ҡалаларында 1 Май хөрмәтенә халыҡ демонстрациялары һәм митингеләре булды.

Нью-Йоркта күп меңләгән кеше ҡатнашлығында Беренсе Май демонстрацияһы булды. «Америка халҡы, — тип әйтелә *Нью-Йорк* хеҙмәтсәндәренең 1 Май митингеһендә ҡабул ителгән резолюцияла, — тыныслыҡ теләй. Ҡытай һәм Корея Халыҡ-демократик республикалары менән тыныс килешеүгә өлгәшеүгә ваҡыт еҫтте. Һуғышҡа сик ҡуйығыҙ һәм тыныслыҡты урынлаштырығыҙ». Нью-Йорк һәм Американың башҡа ҡалаларының эшселәре, хеҙмәткәрҙәре һәм студенттары 1 Май көнөндә АҠШ-тың һуғыш итеүсе ҡуттары тарафынан үткәрелгән һуғышҡа әҙерләнеү политикаһына ҡаршы [illegible] белдерҙеләр һәм тыныслыҡ [illegible] иттеләр.

Италия хеҙмәтсәндәре Беренсе Май байрамын тыныслыҡ өсөн, үҙ сафтарының берҙәмлеген нығытыу өсөн көрәш лозунгылары аҫтында билдәләнеләр. Париж промышленность үҙәге — Милан [illegible]

[illegible] лыҡ өсөн көрәшселәрҙең [illegible] ара хәрәкәтенең үҫеүен һәм [illegible] күрһәттеләр, йөҙәр миллионлаған теләкле кешеләрҙең тыныслыҡты [illegible] тыу эшен үҙ ҡулдарына алырға һәм [illegible] аҙағына тиклем һаҡларға ҡарар [illegible]рен белдерҙеләр. (ТАСС).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 2 май. (ТАСС). Корея [illegible] демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 2 майҙа, [illegible] армияһының частәре Ҡытай добровол[illegible]тәре менән берлектә, бөтә фронтта [illegible] дошманға йәнле көстә һәм техникала [illegible] юғалтыуҙар яһап, ҡаты һуғыш [illegible]рыуҙы дауам иттерҙеләр, тип хәбәр [illegible]

Һуңғы бер нисә көн эсендә булған [illegible]ғыштарҙа Халыҡ армияһының частәре [illegible] меңдән артығыраҡ дошман һалдаты [illegible] офицерын юҡ иттеләр, яраланыусы [illegible] пленгә алдылар һәм ҙур трофейҙар [illegible] иҫәптән, 300 автомашина һәм 30 [illegible] ҡулға төшөрҙөләр.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең биш[illegible] Государство заемының отош тираждары

СССР Финанс министерствоһынан [illegible]гән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, СССР [illegible] хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең бишенсе Государство заемы [illegible] капиталарын предприятиеларҙа һәм учреждениеларҙа подписчиктарға бирә[illegible] ланған. Шулай уҡ үҙ подпискаһы [illegible] топ крәҫтиәндәргә лә облигациялар [illegible]релгән.

Подписчиктарға ниндәй ҙа булһа [illegible] бәйтәр менән бирелмәгән облигациялар үҙәк һаҡлыҡ кассаларына тапшырыл[illegible] лар, подписчиктар уларҙы бер йыл [illegible] ла — 1952 йылдың 1 апреленә [illegible] ала алалар.

СССР халыҡ *хужалығын аяҡҡа* баҫтырыу һәм үҫтереүҙең бишенсе Государство заемы буйынса отоштарҙың быйыл [illegible] тиражы үткәреләсәк. Беренсе тираж [illegible] июлдә Красноярск ҡалаһында, [illegible] раж — 11 ноябрҙә Мәскәү ҡалаһында булаcаҡ. (ТАСС).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Йәшел конвейер ойоштороу

Малдарҙы яҡшы тәрбиәләү һәм ашатыу өсөн йыл әйләнәһендә нормаль шарттар тыуҙырыу уларҙың продукт биреүсәнлеген күтәреүҙә төп шарт булып тора. [illegible]

[illegible] ҙең өс йыллыҡ планы тураһындағы ҡарарҙа партия һәм хөкүмәт мал аҙығы байлыҡтарын яҡшыртыу кәрәклегенә, уларҙы рациональ файҙаланыуға һәм йәшел конвейер ойоштороуға серьез иғтибар биреүҙе талап итә. Был маҡсат өсөн күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡ үлән сәсеүлектәренән һәм кәрәкле күләмдәрҙә һутлы һәм силос культураларының сәсеүлектәренән торған яһалма көтөүлектәр булдырырға тәҡдим ителә. Был ҡарар, һис шикһеҙ, үтәлергә тейеш.

Йәшел конвейерҙе нисек ойошторорға? Йәшел конвейер үҙ эсенә бөтә көтөүлек хужалығын культуралы башланғыстарҙа ойоштороуға йүнәлтелгән төрлө саралар комплексен ала. Уның нигеҙе булып, малдарҙың продукт биреүсәнлегә буйынса план заданиеларынан һәм хужалыҡ шарттарынан сығып, малдарҙың һәр бер группаһын көтөүлектә тотоуҙың хужалыҡ тарафынан төҙөлгән календарь планы тора.

Бөтә көтөүлек осоронда малдарға туҡланыу өсөн нормаль шарттар тыуҙырыу һәм аҙыҡ байлыҡтарын рациональ файҙаланыуға күлтереүгә йүнәлтелгән тәрбиәләүҙең ябай ысулдарын индереү йәшел конвейерҙе ойоштороуҙа беренсе науботтағы бурыс булып тора. Малдарға нормаль туҡланыу булдырыу өсөн һәр бер көтөүҙең көтөүлектәгә аҙыҡҡа булған талабын белергә һәм унан һуң был талапты тулыһынса ҡәнәғәтләндереү өсөн етерлек һанда аҙыҡ булдырырға кәрәк. Аҙыҡҡа булған талап малдарҙың айырым группалары өсөн билдәләнелгән рационға ярашлы рәүештә уларҙың йәшенә, продукт биреүсәнлегенә һәм башҡа үҙенсәлектәренә ҡарап билдәләнелә. Мәҫәлән, бер тәүлеккә мөгөҙлө эре малға 50-60, бер йәштән ... 13-18, бер йәштән ... 25-30, аттарға ... суҫкаларға 8 ... лап ителә.

Талап ителгән аҙыҡтарҙы беренсе науботта хужалыҡтың ... ры иҫәбенә тулыраҡ ... хужалыҡтың бөтә ... көтөүлектәр, сабынлыҡтар ... иҫәпкә алына, ... тары һәм ул ... дәйем запасы ... аҙыҡ сәселгән ... сәсеү әйләнешенең ... нешә участкала ... ралар һәм си ... тейеш.

Файҙаланыу өсөн ... лектәр һәм ку... схемаһына ин... ҙаланыу өсөн ... йәпалар һәм ... сроктары күрһ... көтөүлектәрҙә ... буласаҡ.

Йәшел конв... сәселгән үләнд... культуралар һ...

Иртә өлгәрг... тоторожлораҡ ... науботта файҙа... ғы көтөүлектәр ... ҙаланыла торғ... бәттә файҙалан... лектәр буҙа. У... центнер йәшел ... ренсе ярты... цент урожай ... минимумы ху... лектәргә яҡын... ымырлы ко... көтөүлектәрҙән ... сереге тура ...

көтөүлектәрҙә малдарҙы йөрөтөү тыйыла.

Дымлы райондарҙа сәселгән күп йыллыҡ үләндәр иҫәбенә клевер, болон тимофеевкаһы, болон һолоһо, болон һоло-башы һәм башҡа ҡайһы бер үләндәр; урман-ялан һәм ялан райондарҙа люцерна, житняк, тамырһыҙ аҡтамыр, ҡылсыҡһыҙ костер һәм башҡалар инә. Ашала торған йәшел массаны улар гектарынан 50 — 60 центнер бирәләр.

Бер йыллыҡ үләндәрҙең иртә һәм һуң сәселгәндәре була. Иртә сәселгән үләндәргә көҙгө арыш үләнә һәм вика менән һоло, борсаҡ менән һоло ҡушымтаһы һәм башҡалар инә. Һуң сәселгән үләндәр кукуруз, чумиза һәм башҡа үләндәрҙән тора.

Көҙгө арыш үләндәре май айында, ҡатнаш үләнле көтөүлектәрҙә 15 — 20 июндән 15 августа — 1 сентябргә тиклем, өҫтәмә туҡландырыу өсөн июнь аҙағынан алып июль баштарына тиклем файҙаланыла; һуң сәселгән бер йыллыҡ үләндәр тамырҙа сағында 15 — 20 июндән 15 августа — 1 сентябргә тиктуҡландырыу өсөн июль аҙаҡтарынан алып файҙаланыла. Бер йыллыҡ үләндәрҙе файҙаланыу срогын оҙайтыу өсөн улар 4 срокта сәселә.

Һутлы культуралар — тамыр аҙыҡтары (турнепс, шалҡан, сөгөлдөр һәм кишер), баҡса культуралары (таш-ҡабаҡ, аш-ҡабаҡ) гектарына 200 — 254 центнер һәм унан да күберәк һутлы аҙыҡ бирә. Таш-ҡабаҡтар июль аҙағынан алып, аш-ҡабаҡ 15-25 августан, тамыр аҙыҡтары 15 августан — 1 сентябрҙән файҙаланыла башлана.

Силос. Юғарыла әйтелгән һутлы культуралар булмаған ваҡытта көҙгө осорҙа төп культуралар башаҡланған осорҙа сабылған үләндәрҙән силос һалына.

Сабынлыҡтарҙа ҡурпылар бесән сапҡандан һуң 20-25 көн үткәс һәм октябрь айына тиклем файҙаланылалар.

Юғарыла әйтелгән культураларҙың һәм көтөүлектәрҙең төрлө ваҡытта өлгәреүҙәре һәм файҙаланылыуҙары арҡаһында өҙлөкһөҙ һөт һауып алыуҙы тәьмин итеүсе йәшел конвейер барлыҡҡа килтерелә.

Йәшел конвейерҙе индергән ваҡытта көтөүлектәрҙе һәм йәшел конвейерҙең сәселгән культураларын тәрбиәләү, малдарҙы картала ашатыу, йәшел конвейер культураларын файҙаланыу сроктарын күҙәтеү кеүек өҫтәмә сараларҙы ла ҡулланырға кәрәк.

Йәшел конвейер беҙҙең республикала даими сара булып әлегә тиклем тик Башҡортостан малсылыҡ тәжрибә станцияһында һәм Архангель районының М. Горький исемендәге колхозында ғына индерелгән. Башҡортостан малсылыҡ тәжрибә станцияһында йәшел конвейерҙе индереү һөҙөмтәһендә 1951 йылда фуражлағы һәр бер һыйырҙан 3724 килограмм, ә М. Горький исемендәге колхозда 2196,5 килограмм һөт һауып алынды.

Һәр бер малсылыҡ хужалығы малдарҙы көтөүлектәрҙә аҫрауҙы тәртипкә һалыу мәсьәләләрен хәл итеү менән хәҙерҙән үк шөғөлләнергә тейеш. Бының өсөн һәр бер көтөүгә көтөүлек аҙығы балансын төҙөргә һәм көтөүлектәрҙә аҙыҡ етмәгән шарттарҙа малдарҙы өҫтәмә туҡландырыу өсөн үткән йылғы сәсеүлектәрҙән ҡалған күп йыллыҡ үлән участкаларын файҙаланырға, бер йыллыҡ үләндәр һәм һутлы культуралар сәсеүлектәрен планлаштырырға, картала ашатыуҙы индерергә, көтөүлектәрҙе һыу-сарҙан таҙартырға, һыулау урындарын тәртипкә килтерергә һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу һәм тәрбиәләү буйынса саралар билдәләргә кәрәк.

К. Мусатова,
ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлеге — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

ПО 1952 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25 000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШКОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттәре, Башкорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө Кала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

1951 йыл
№ 87 (8804)
5
МАЙ
шәмбе

хаҡы 20 тин.

Бөгөн—большевистик матбуғат көнө.

Матбуғат—иң көслө ҡорал, уның ярҙамында партия көн һайын, сәғәт һайын эшселәр синифы менән үҙенә кәрәкле, үҙ телендә һөйләшә. Партия менән синыф араһында рухани ептәр һуҙырлыҡ башҡа средстволар, башҡа бындай тапҡыр аппарат тәбиғәттә юҡ.

И. СТАЛИН.

Коммунизм өсөн көрәштә ҡеүәтле ҡорал

Бөгөн большевистик матбуғат көнө. 1912 йылдың 5 майында Лениндең күрһәтмәһе нигеҙендә, иптәш Сталин инициативаһы менән большевистик газета «Правда»ның беренсе номеры сыҡты. Ленин һәм Сталин «Правда» газетаһының бөйөк нигеҙләүселәре, редакторҙары һәм публицистәре булдылар. Улар, «Правда» йәрҙамында, большевистик партияны төрлө өсөн көрәштең ҡеүәтле ҡоралын барлыҡҡа килтерҙеләр, газетаны коллектив пропагандиска, коллектив агитаторға, коллектив ойоштороусыға әүерелдерҙеләр. «Правда» газетаһының тыуған көнөн большевистик матбуғат көнө итеп үткәреү беҙҙең совет халҡының традицияһына әйләнде.

Большевистик матбуғат тарихи әһәмиәткә эйә булып торған бөйөк һәм данлы юл үтте. Ул халыҡтарҙың азатлығы өсөн, батша самодержавиеһына ҡаршы ҡаты көрәш юлын, социалистик революция еңгәндән һуңында илебеҙҙә Совет власын урынлаштырыу һәм нығытыу өсөн, социализм төҙөү өсөн көрәш юлын яҡтыртты. Халыҡ хужалығын һәм социалистик культураны үҫтереүҙә, сталинса биш йыллыҡтар осоронда социалистик ярышты һәм стахановсы хәрәкәтте йәйелдереүҙә матбуғат сикһеҙ ҙур роль уйнаны. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында беҙҙең газеталарыбыҙ һәм журналдарыбыҙ хеҙмәтсән массаларҙа дошманға ҡарата мәрхәмәтһеҙлек һәм нәфрәт тойғоларын, совет патриотизмы, дуҫлыҡ һәм еңелмәҫлек тойғолары, Тыуған илебеҙгә, большевиктар партияһына, бөйөк Сталинға тәрән мөхәббәт һәм аҙағынаса бирелгәнлек тойғолары тәрбиәләне, эшселәрҙе, колхозсыларҙы һәм совет интеллигенцияһын Ватаныбыҙ бәхете хаҡына фиҙакәр хеҙмәткә күтәрҙе. Һуғыштан һуңғы осорҙа хеҙмәтсәндәрҙе халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең сталинса биш йыллыҡ планын срогынан алда үтәү, илебеҙҙә коммунизм тантанаһын яҡынайтыу өсөн көрәшкә мобилизацияланы. Большевистик матбуғат үҙенең бөтә тарихе буйына марксизм-ленинизмдың бөйөк идеяларын пропагандалауҙың көслө ҡоралы булды.

Беҙҙең большевистик матбуғатыбыҙҙың авторитеты ғәйәт ҙур. Хеҙмәтсәндәр үҙ матбуғаттарын яраталар, уны юғары баһалайҙар, сөнки совет матбуғатын массаларҙың үҙҙәре менән тығыҙ бәйләнгән, улар үҙҙәре хәбәрсе булып, унда актив ҡатнашалар. Массалар менән большевистик матбуғаттың араһы өҙөлмәҫлек тығыҙ бәйләнгән, ул яңы типтағы матбуғат булып, тәнҡиттә, дөрөҫлектә һәм туралыҡты һөйөүсе булып, алға барыуға ҡамасаулаусы бөтә кәртәләрҙе, бюрократизм, волокитаны емереүсе, етешһеҙлектәр менән килешмәүсе булып тора.

Совет иленең матбуғаты донъяла бөтә прогрессив матбуғаттың авангардында бара. Уның данлыҡлы традицияларын, уның коллектив-пропагандист, агитатор һәм ойоштороусы булыу тәжрибәләрен социализм юлына баҫҡан халыҡ демократияһы илдәренең матбуғаты үҙенә күсерәс итеп ҡуллана. Беҙҙең илебеҙҙең һәм яңы демократия илдәренең матбуғаты яңы һуғыш тоҡандырыусыларҙың енәйәтсел планын фашлай, ер йөҙөндә тыныслыҡ өсөн, демократия һәм социализм өсөн, кешелектең бәхете — коммунизм өсөн арымай-талмай көрәшә.

Буржуаз матбуғаттың, империалистик матбуғаттың маҡсаттары һәм бурыстары бөтөнләй башҡа. Беренсе нәүбәттә Америка, Англия һәм башҡа шундай капиталистик илдәрҙең һатлыҡ һәм ялған матбуғаты яңы һуғыш өсөн, Совет иленә, демократия илдәренә ҡаршы, донъялағы бөтә прогрессив нәмәгә ҡаршы көрәш алып бара. Ләкин демократик лагерь көстәре үҫкәндән-үҫә баралар, буржуаз матбуғаттың алдашыуҙарын һәм хәрби истерия бәсеүен фашлайҙар.

Буржуаз матбуғат капитализм менән бергә сереүгә, үлемгә барған бер ваҡытта, Совет иленең большевистик матбуғаты һаман үҫә, сәскә ата. Беҙҙең совет матбуғатының үҫеүе совет халҡының политик һәм культура кимәленең үҫешен күрһәтә. Хәҙер беҙҙә газета, журнал, китап уҡымаған семьяны табыу мөмкин түгел. СССР-ҙа 8 меңгә яҡын газета һәм 1.400 журнал баҫып сығарыла. Революцияға тиклемгегә сағыштырғанда, газеталар тиражы 1950 йылға 12 ярым тапҡырға артты. Быларҙан тыш йөҙ меңдәрсә стена газеталары сығып килә.

Беҙҙең Башҡортостанда ла матбуғат селтәре бик ныҡ үҫте. Хәҙер республикабыҙҙа 120 мең тираж менән 5 өлкә газетаһы — «Ҡыҙыл Башҡортостан», «Красная Башкирия», «Ҡыҙыл Таң», «Ленинсе», һәм «Ленинец» газеталары, һәр бер районда район газеталары, унан башҡа халыҡ хужалығының мөһим тармаҡтарында «Лес—родине», «Водник Башкирии», «Большевистская путевка», «Башкирский нефтяник» газеталары сыға. Былар бөтәһе лә илебеҙҙә социалистик демократияның һәм матбуғат азатлығының ысын сәскә атыуы тураһында һөйләйҙәр. Улар хеҙмәтсән массаларҙы Ленин — Сталин идеяларында, коммунизм рухында тәрбиәләү, уларҙы коммунизм өсөн көрәшкә туплау бурыстарын үтәйҙәр.

Хәҙер, коммунизм обществоһы төҙөгән осорҙа, коммунизмдең бөйөк гиганттарының төҙөлешә барған ваҡытта большевистик матбуғат алдында тағы ла яуаплыраҡ һәм ҡатмарлыраҡ бурыстар ҡуйыла. Партия матбуғаттан производство экономикаһына тәрәнерәк инеүҙе, новаторҙарҙың алдынғы тәжрибәләре тураһында асығыраҡ һәм күберәк яҙыуҙы, уларҙы киң массаларҙың достояниеһе итеү өсөн көрәшеүҙе талап итә. Матбуғат, шул иҫәптән стена газеталары ла халыҡ хужалығы пландарын срогынан алда үтәү өсөн бөтә халыҡ социалистик ярышының артабан күтәрелешенә ярҙам итергә, коммунизм ҡоролмаларын бөтә халыҡ эше итеп пропагандаларға тейеш.

Ауыл ерҙәрендәге матбуғаттың бурысы юғары урожай алыу өсөн, общественный малсылыҡты артабан үҫтереү өсөн мичуринсе агробиологияның өлгәшеүҙәрен, социалистик ауыл хужалығы мастерҙарының алдынғы тәжрибәләрен колхоз һәм совхоз производствоһына индереү өсөн көрәш ойоштороуҙан тора.

Большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү совет матбуғаты эшенең нигеҙендә ята. Иптәш Сталин, большевистик тәнҡиттән башҡа алға барыу мөмкин түгел, үҙ-үҙеңде тәнҡитләү беҙгә һауа кеүек, һыу кеүек кәрәк, тип өйрәтә. Шуға күрә хеҙмәтсәндәрҙең ижади активлеген үҫтереү, түбәндән күтәрелгән дөрөҫ тәнҡитте актив яҡлау — матбуғаттың мөһим бурысы ул.

Большевистик матбуғат үҙ эшендә массаларға, активҡа таяна. Һәр бер газета үҙенең хәбәрселәренең һанын арттырыу, улар менән даими тығыҙ бәйләнештә булыу сараларын күрергә тейеш.

Партия ойошмалары үҙҙәренең баҫма органдары менән яҡшы етәкселек итергә, уларҙың идея кимәлен күтәрергә, беҙҙең дөйөм эшебеҙҙә — коммунизм өсөн, Ленин — Сталин партияһының бөйөк эшенең тантанаһы өсөн көрәштә уларҙың ролен күтәрергә бурыслылар.

Совет журналистәре һәм хәбәрселәр, үҙҙәренең большевистик матбуғат өлкәһендәге бурыстарын ныҡ аңлап һәм большевистик һүҙ оҫталыҡтарын камиллаштереп, совет матбуғатын артабан нығытыу өсөн тағы ла яҡшыраҡ эштәргә партиябыҙға, бөйөк Сталинға һүҙ бирәләр.

Большевистик матбуғаттың бөтә көсөн коммунизм тантанаһы өсөн көрәшкә туплайыҡ!

Большевистик матбуғатҡа нигеҙ һалыусы, совет журналистәренең иң яҡын дуҫы, бөйөк Сталинға дан!

В. И. Ленин, И. В. Сталин, В. М. Молотов 1917 йылда «Правда» газетаһы редакцияһында.
Художник П. Васильев һүрәтенән (ТАСС фотохроникаһы).

Социалистик ярыш һөҙөмтәһендә

Стәрлебаш районы Сталин исемендәге колхоз иртә культураларҙы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәрҙе. Бөтәһе 907 гектар иртә культуралар, шул иҫәптән 630 гектар бойҙай, 150 гектар һоло һәм башҡа ашлыҡтар сәселде. 100 гектар бойҙайҙы сәсеү арҡыры-буй ысул менән башҡарылды.

Колхоз правлениеһе һәм колхоз партия ойошмаһы яҙғы сәсеүҙе ойоштороуға ныҡ иғтибар итте. Баҫыусылыҡ бригадаларында яуаплы участкаларға партия членары ҡуйылдылар, колхозсылар араһында эшләү өсөн агитаторҙар билдәләнде.

Бөтә бригадалар һәм колхозсылар социалистик ярыш менән солғап алынды. Ибраһимов һәм Суярғолов иптәштәр етәкселек иткән беренсе һәм икенсе номерлө баҫыусылыҡ бригадалары ярыш алдынғылары булып сыҡтылар. Атлы сәскестә эшләүсе иптәш Биктимер Ишембәтов көн һайын 4,5 гектар урынына 6 гектар, иптәш Мәфтүхә Әхмәтова 5,5 гектар ашлыҡ сәсте.

Иптәш Минһаж Татигачев етәкселек иткән трактор бригадаһы механизаторҙары смена нормаһын систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр. Комсомолец иптәш Ғәбделхәй Абдрахманов ХТЗ — НАТИ тракторы менән сменаға 37 гектар урынына 45 — 50 гектар бойҙай сәсте.

Колхозсылар ҙа, шулай уҡ механизаторҙар ҙа баҫыу стандарында ҡунып эшләнеләр. Улар өсөн бөтә тормош шарттары тыуҙырылды. Агитаторҙарҙан Фәйзуллин, Хәйретдинова, Насибуллина һәм Хәмидиева иптәштәр эште айырыуса яҡшы башҡарҙылар. Улар көсө менән трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларында 5 көн һайын стена газеталары һәм боевой листок сығарылды. Ял ваҡыттарында беседалар үткәрелде. Механизаторҙарҙың төнгө сменаларын ойоштороуҙа колхоз правлениеһе членары, ферма мөдирҙәре ҡатнашлыҡ иттеләр. Колхозсылар һәм механизаторҙар ҡатнашлығында өс тапҡыр производство кәңәшмәһе үткәрелде.

Хәҙер беҙ һуңғы культураларҙы сәсәбеҙ. Был эш тә юғары сифатлы итеп 5-6 көндә тамамланасаҡ. Беҙ һүҙебеҙҙә торасаҡбыҙ.

А. Лоҡманов,

колхоз партия ойошмаһы секретары.

Пар һөрөү башланды

Мишкә районы Әптекәев исемендәге ауыл хужалығы артеленең членары, иртә культуралар сәсеү планын 7 эш көнендә тамамлап, ВКП(б) район комитетының һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын алдылар.

Был колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Козиев етәкселек иткән трактор бригадаһы, баҫыусылыҡ бригадаһы менән тәрән дуҫлыҡта сәғәт графиге менән эшләп, 735 гектар майҙанда яровой ашлыҡ культуралары сәсте. Трактористорҙан Алексеев һәм Ветлин иптәштәр сменаға 40-ар гектар ашлыҡ сәстеләр. Комсомолец-трактористарҙан Егор Козиев, Сәлимә Алмаҡаева, сәскес машиналарында эшләүсе Байметов, Батурин һәм Байтимиров иптәштәр смена заданиеларын һәр көндә арттырып үтәнеләр.

Хәҙер колхозда пар ерҙәре һөрөү башланды. Тәүге өс көндә механизаторҙар 60 гектар пар ере һөрҙөләр.

Х. Сафин.

БЕҘ ЯҘЫЛДЫК ЯҢЫ ЗАЕМҒА

Һандуғаслы йәшел баҡсаларҙың
Сәскәләргә сумған айында,
Шул баҡсалай гүзәл тормошобоҙ
Матур булһын өсөн тағы ла
Беҙ яҙылдыҡ яңы заемға.
Уның көсө менән яңы йорттар,
Яңы гигант ГЭС-тар һалыныр,
Заем көсө яңы ҡалаларҙа
Ильич уты булып ҡабыныр.
Был ышаныс яҙғы таң шикелле
Балҡып тора һәр кем янында,
Енел һәм ырамлы булһын өсөн
Шул маҡсатҡа илткән аҙымдар
Беҙ яҙылдыҡ яңы заемға.
Беҙҙең һөйөүҙәрҙең хаҡ иҫәнен
Дөрөҫләгән миллион имзалар,
Бөйөк төҙөлештәр килдегенә
Бөгөн ярҙам ҡулы һуҙалар.
Яңы заем — тилмәк, яңы өмөт,
Яңы үҫеш, яңы еңеүҙәр,
Был еңеүҙәр, мәңгелек дан булып,
Быуаттарға шаулап инерҙәр,
Был еңеүҙәр бөгө кешелеккә
Тыныс йәшәү бәхетен бирерҙәр.
Һандуғаслы йәшел баҡсаларҙың
Сәскәләргә сумған айында,
Шул баҡсалай гүзәл Ватаныбыҙ
Көслө булһын өсөн тағы ла,
Беҙ яҙылдыҡ яңы заемға.

Карам Бакиров.

МИНЕҢ АҠСАМ

Беләм,
Әгәр ҙә мин бөгөн
бирәм икән
Үҙ аҡсамдан йөҙ,
йә мең һумды.
Шул аҡсама минең
Коммунизм өсөн
Тағы ла бер яңы
йорт тыуыр.
Минең аҡсам — көсөм,
тормошомдоң,
Хеҙмәтемдең сәскә атыуы.
Тыныслығым,
Ижадым шишмәһе ул,
йырым да ул
бәхет, шатлығым.
Минең аҡсам тәҙәр —
тууы һыуҙы,
Гранит ярлы оҙон каналдар.
Ҡара буран,
комлоҡтарҙы ҡаплап,
Ҡуйы урман булып шаулаҙҙар.
Һәм мин биргән аҡса
ҡайҙа булһа
Бер йылғаның борор ағышын.
Һәйкәл булып,
халыҡтар дуҫлығына
Ике диңгеҙ бергә ҡауышыр.

М. Тажи.

Күсмә Ҡыҙыл Байраҡ тапшырылды

Ҡандра. (Телефон аша). «Победа» ауыл хужалығы артеле членары һәм был колхозды хеҙмәтләндереүсе механизаторҙар Беренсе Май байрамын достойн ҡаршыланылар. Улар Май алды социалистик ярышында ҙур еңеүҙәргә өлгәштеләр, районда беренсе булып иртә культуралар сәсеүҙе тамамланылар.

Баҫыу эштәре нигеҙҙә тракторҙар көсө менән генә башҡарылды. Ҡарамалы-Ғөбәй МТС-ының иптәш Шаһиев етәкселек иткән трактор бригадаһы колхозсыларҙың ышанысын тулыһынса аҡланы. Бригада, сәғәт графигы менән эшләп, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 650 гектар майҙанда бойҙай, 240 гектар майҙанда һоло сәсте. Трактористорҙан Почуев, Хәжибәков иптәштәр СТЗ — НАТИ тракторында смена һайын 44 гектар урынына 75 — 80-шәр гектар майҙанда ашлыҡ сәстеләр.

Социалистик ярышта беренселекте алыусы был колхозға ВКП(б) райкомының һәм район Советы исполкомының, ә иптәш Шаһиев етәкселек иткән трактор бригадаһына МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байраҡтары тапшырылды.

С. Малинов.

1951 йылда Беренсе Майҙы Мәскәүҙә байрам итеү. Һүрәттә (һулдан уңға): 1. Ҡыҙыл Майҙанда хеҙмәтсәндәр демонстрацияһы. 2. Мәскәү гарнизоны ғәскәрҙәренең Ҡыҙыл Майҙанда парады. 3. Танкылар парадта.

В. Савостьянов һәм А. Батанов фотолары (ТАСС фотохроникаһы).

Социалистик Тыуған илде артабан сәскә аттырыу заемы

А. ЗВЕРЕВ.
СССР Финанс министре.

Совет хөкүмәте тарафынан СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемы сығарылды. Яңы заемды таратыуҙан алынасаҡ средстволар социалистик Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәтен артабан нығытыуға, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен — Волгала Куйбышев һәм Сталинград гидроэлектростанцияларын, Днепрҙа Каховка гидроэлектростанцияһын, Төп Төркмәнстан, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡырым каналдарын төҙөүгә, халыҡтың материаль көн-күрешен артабан күтәреүгә йүнәлдереләсәк.

Быйыл яңы заемды таратыу массаларҙың һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды үтәүҙә һәм коммунистик обществоны төҙөүҙә совет халҡының гүзәл уңыштары менән тыуҙырылған политик һәм хеҙмәт активлегенең ғәйәт ҙур күтәрелеше шарттарында үткәрелә.

Советтар Союзы хеҙмәтсәндәре һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды уңышлы үтәнеләр һәм пландың иң мөһим заданиеларын байтаҡ арттырып үтәнеләр. Һуғыш тарафынан емертелгән халҡ хужалығы бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә аяҡҡа баҫтырылды һәм производствоның һуғышҡа тиклемге кимәле бик күп уҙып кителде. Шуның һөҙөмтәһендә тыныслыҡ һәм демократияның ҡеүәтле лагерена етәкселек итеүсе социалистик государствоның политик һәм экономик көсө тағы ла күберәк үҫте һәм нығыны.

1950 йылда бөтә промышленностең валовой продукцияһын етештереү һуғышҡа тиклемге кимәлдән 73 процентҡа уҙып китте. СССР промышленносе биш йыллыҡ планды срогынан алда — дүрт йыл һәм өс ай эсендә үтәне. Биш йыллыҡ план тарафынан промышленность продукцияһының күләме буйынса 1950 йылға билдәләнгән задание 17 процентҡа арттырып үтәлде.

Ҡара иретеү һәм прокат, төҫлө һәм һирәк осрай торған металдар етештереү, күмер һәм нефть сығарыу, электр энергияһын эшкәртеү, станоктар һәм машиналар эшләп сығарыу буйынса биш йыллыҡ план арттырып үтәлде. 6000-дән артығыраҡ промышленность предприятиеһы аяҡҡа баҫтырылды һәм төҙөлдө.

Хәҙерге заман техникаһының иң яҡшы өлгөшеүҙәрен индереү нигеҙендә социалистик промышленностең бөтә тармаҡтарының техник кимәлен артабан күтәреү тәьмин ителде, был, ҙур масштабтарҙа халҡ хужалығын артабан техник ҡайтанан ҡоралландырыуҙы үткәрергә һәм күп хеҙмәт талап итеүсе һәм ауыр эштәрҙе механизациялау кимәлен күтәрергә мөмкинлек бирҙе.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында еңел, аҙыҡ промышленносе һәм промышленностең массовый ҡулланыу тауарҙарын етештереүсе башҡа тармаҡтарын йылдам аяҡҡа баҫтырыуға өлгәшелде. Биш йыллыҡта киҙе-мамыҡ туҡымаларын етештереү 2,4 тапҡырға, йөн туҡымаларын — 2,9 тапҡырға, күн аяҡ кейемдәрен етештереү 3,2 тапҡырға артты. Мал майын етештереүҙең һуғышҡа тиклемге кимәле 1950 йылда 57 процентҡа, консервалар — 48 процентҡа, кондитер изделиеларе етештереү 23 процентҡа уҙып кителде. Государство һәм кооператив сауҙа ойошмалары быйтыр, 1949 йылға ҡарағанда, тауарҙы 30 процентҡа күберәк һаттылар.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында, СССР промышленносе, миллионлаған эшсәндәрҙең социалистик ярышын йәйелдереү һәм производство новаторҙарының ижади инициативаһын киң файҙаланыу нигеҙендә, хеҙмәт етештереүсәнлегенең байтаҡ күтәрелеүенә өлгәште. Шуны ла әйтеү етә, промышленноста эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге 37 процентҡа күтәрелде.

Социалистиҡ ауыл хужалығы ла бик ныҡ алға китте. Бөртөклө ашлыҡ культураларының уржайлылығы буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе арттырып үтәлде. Илебеҙ колхоздары һәм совхоздары быйтыр, 1940 йылға ҡарағанда, 345 миллион ботҡа артығыраҡ иген йыйып алдылар. Социалистик малсылыҡты үҫтереүҙә, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планын тормошҡа ашырыуҙа сериөҙ уңыштарға өлгәшелде.

Социалистик экономиканы тайпылышһыҙ күтәреү нигеҙендә Совет государствоһының милли доходы йылдан-йыл үҫә, хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күреш һәм культура кимәле өҙлөкһөҙ яҡшыра бара. Сталинсе биш йыллыҡты үтәү һөҙөмтәһендә милли доход 1940 йылға сағыштырғанда, сағыштырмаса хаҡтарҙа 64 процентҡа артты. Милли доходты үҫеү һәм Государство бюджетын уңышлы үтәү һөҙөмтәһендә халҡ хужалығына капитал һалымдар буйынса биш йыллыҡ план 22 процентҡа арттырып үтәлде.

Массовый ҡулланыу тауарҙарына ваҡлап һатыу хаҡтарын әҙмә-әҙ арзанайтыу совет халҡының тормошон яҡшыртыу тураһында партия, хөкүмәт һәм иптәш Сталиндең хаҡтарыҡ күреүкең асыҡ ҡау-[illegible]

Совет кешеләренең үҫә барған материаль һәм культура талаптарын [illegible] 1951 йылға [illegible] Государство бюджеты [illegible] 27,5 миллиард һум [illegible] һумға [illegible].

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ [illegible] хеҙмәтсәндәрҙең [illegible] пособиелар һәм социаль страхование буйынса [illegible]

йылса түләүҙәр, социаль тәьминәт буйынса пенсиялар, күп балалы һәм яңғыҙ әсәләргә пособиелар, санаторийҙарға һәм ял йорттарына түләүһеҙ һәм льготалы хаҡтар менән путевкалар, түләүһеҙ медицина ярҙамы, түләүһеҙ уҡыу һәм государство иҫәбенә хеҙмәтсәндәрҙең квалификацияларын күтәреүҙе, уҡыусыларға стипендиялар, түләнә торған отпускылар һәм башҡаларҙы алды. Тик 1950 йылда ғына государство иҫәбенә юғарыла әйтелгән түләүҙәр һәм льготалар суммаһы 120 миллиард һумдан артығыраҡ, йәғни һуғышҡа тиклемге 1940 йылға ҡарағанда, 3 тапҡырға артығыраҡ тәшкил итте.

Совет экономикаһын күтәреү һәм милли доходтың үҫеүе һөҙөмтәһендә 1950 йылда эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр доходының һәм крәҫтиәндәр доходының дөйөм суммаһы, 1940 йылға сағыштырғанда, 62 процентҡа артты.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды үтәүҙә совет халҡының тарихи уңыштарында беҙҙең илебеҙҙә бөйөк Сталиндең тәрән аҡыллы юлбашсылығында алға, коммунизмға йүнәлтеүсе большевиктар партияһының ғәйәт ҙур ойоштороусанлыҡ роле ҡаҙҙәләнде.

Хужалыҡтың капиталистик системаһының нигеҙһеҙлеге, капиталистик илдәрҙә экономиканың һәм культураның тәшенкелеге СССР халҡ хужалығының ҡеүәтле күтәрелеш фонында айырыуса асыҡ күренә.

Ҡоралланыуҙар артынан ҡотороноп ҡыуыуҙы үҫтереп, АҠШ, Англия, Франция һәм башҡа агрессив государстволарҙың империалистары хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәленә ҡаты һөжүм итеүҙе тормошҡа ашыралар. Массовый ҡулланыу тауарҙарына хаҡтар өҙлөкһөҙ күтәрелә, налогтар арта, эшселәрҙең реаль эш хаҡы кәмей. Тик 1950 йылда ғына АҠШ-та аҙыҡ-түлек тауарҙарына хаҡтар 24 процентҡа ла артығыраҡҡа күтәрелде. Англияла йән башына туҡланыу продукттары ҡулланыу ҡырҡа кәмегән. Власть башында лейбористар торған осорҙа хаҡтарҙың дөйөм индексы ике тапҡырға тиерлек күтәрелгән.

Капиталистик илдәрҙең реакцион хөкүмәттәре, Американ монополистарының күрһәтеүе буйынса яңы бөтә донъя һуғышын әҙерләп, үҙ илдәренең экономикаһын хәрби рельстарға күсерәләр, армияны арттыралар, хәрби бюджеттарҙы ҡабарталар.

Совет Социалистик государствоһы капиталистик государстволарҙан тамырынан айырылып торған политиканы үткәрә. Совет хөкүмәтенең бөтә тырышлыҡтары тыныслыҡты нығытыуға, социалистик экономиканы артабан үҫтереүгә һәм беҙҙең илебеҙ халыҡтарының тормош шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтелгән. 1951 йылға Государство бюджеты тураһында СССР Верховный Советы тарафынан ошо йылдың март айында ҡабул ителгән Закон быны асыҡ күрһәтә. Быйылғы йылдың Государство бюджетында халҡ хужалығына расходтар ғәйәт ҙур сумма — 178,5 миллиард һум, йәки 1950 йылға ҡарағанда, 21,2 миллиард һумға артығыраҡ күҙҙә тотолған. Был сумманың ҙур өлөшө капиталь төҙөлөшкә — яңы фабрикалар, заводтар, шахталар, тимер юлдар, торлаҡтар төҙөүгә, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен — ҡеүәтле гидроэлектростанцияларҙы, каналдарҙы һәм һуғарыу системаларын төҙөүҙе тормошҡа ашырыуға билдәләнелгән. Бер үк ваҡытта культураны һәм фәнде үҫтереүгә һәм халыҡтың һаулығын һаҡлау һәм социаль тәьминәт буйынса сараларға Государство бюджетынан 120,8 миллиард һум бүленә.

Шулай итеп, 300 миллиард һум самаһы йәки бюджеттың расход өлөшөнөң өстән ике өлөшө тиерлек хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнә файҙаланыласаҡ. Шул уҡ ваҡытта оборонаға ассигнованиелар 96,4 миллиард һум күләмендә билдәләнелгән һәм Государство бюджетының бөтә расходтарының ни бары 21,3 проценты ғенә тәшкил итә, ә 1940 йылда 32,5 процент тәшкил иткәйне.

Совет бюджетының расходтары бөтәһенән элек, социалистик хужалыҡтан—бюджет доходтарының төп өлөшөн тәшкил иткән промышленностан, сауҙанан, ауыл хужалығынан алынасаҡ керемдәр менән ҡапланa.

Халҡ араһында таратыла торған государство заемдары буйынса керемдәр СССР Государство бюджеты доходтары сығанаҡтарының береһе булып торалар.

Һуғышҡа тиклемге сталинсе биш йыллыҡтар йылдарында Совет государствоһы заемдарҙан 50 миллиард һум самаһы средство алды. Был средстволар социалистик экономиканы һәм культураны үҫтереү өсөн һәм илебеҙҙең оборона һәләтлелеген нығытыу өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булдылар.

Бөйөк Ватан һуғышының ауыр йылдарында совет халҡы үҙ государствоһына 76 миллиард һумдан артығыраҡ аҡсаны бурысҡа бирҙе. Был средстволар Совет Армияһының хәрби ҡеүәтен көсәйтеүҙә ҙур роль уйнанылар һәм фашистик баҫҡынсыларҙы тар-мар итеүгә булышлыҡ иттеләр.

Һуғыш тамамланғандан һуң заемдар буйынса керемдәр 130 миллиард һум тәшкил итте. Государство заемдарының средстволары һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың иң ҙур бурыстарын үтәүгә — халҡ хужалығын алҡҡа баҫтырыуға һәм үҫтереүгә, ҡалалар һәм ауылдар төҙөүгә, хеҙмәтсәндәрҙең культураһын күтәреүгә һәм материаль-көн-күреш шарттарын яҡшыртыуға йүнәлдерелде.

Беҙҙең заемдарыбыҙ Советтар Союзы халыҡтарының бөтә ҡатламдары араһында ғәйәт ҙур уңыш менән файҙаланалар. Эшселәр, колхозсылар, хеҙмәтсән интеллигенция үҙ аҡсаһын государствоға бурысҡа биреп, государство заемдарына энтузиазм менән яҙылалар. Государство заемдары облигацияларын тотоусылар һанының хәҙерге ваҡытта 70 миллион самаһы кешене тәшкил итеү факты совет заемдарының ысын халҡ характерында булыуын асыҡ күрһәтә.

Беҙҙең заемдарыбыҙҙы киң яҡлау, Ленин—Сталин партияһына совет халҡының иқбез-ениһеҙ бирелгәнлеген ҡаҙҙәләндерә.

Беҙҙең Совет государство заемдарыбыҙ капиталистик илдәрҙең заемдарынан тамырынан айырылалар һәм уларға ҡарағанда ғәйәт ҙур өҫтөнлөктәр алып торалар.

Капиталистик государстволарҙа заемдар уларҙың агрессив пландарын тормошҡа ашырыу һәм капитал магнаттарын өҫтәмә байыҡтырыу өсөн файҙаланылалар.

Капиталистик илдәрҙә заемдар халҡҡа файҙалы характерҙа түгелдәр һәм улар буйынса түләүҙәр налог керемдәрен арттырыу иҫәбенә үткәрелә. Һәр бер яңы заем налогтарҙың артыуын тыуҙыра, хеҙмәтсәндәрҙе өҫтәмә эксплуатациялау средствоһы булып хеҙмәт итә.

Капиталистик илдәрҙә государство заемдары эре буржуазияның байыуы сығанағы булып тора. Государство заемдары облигацияларының ҙур күпселек өлөшөн биләп тороусы капиталистик монополистар заемдар буйынса облигациялар менән спекуляция яһап, проценттар сифатында ғәйәт ҙур табыштар алалар.

Беҙҙең совет заемдарыбыҙ бөтөнләйгә икенсе төрлө характерҙалар. Совет заемдары — ысын халҡ заемдары ул. СССР-ҙа бөтә хеҙмәтсәндәр ҙә заемдарға подписчик булып торалар. Заем средстволары халҡ интересларына тулыһынса яуап биреүсе маҡсаттарға йүнәлтеләләр.

Бер үк ваҡытта совет заемдары хеҙмәтсәндәр тарафынан өтоштар сифатында алына торған доходтарҙың өҫтәмә сығанаҡтарының береһе булып хеҙмәт итәләр.

Беҙҙең государствобыҙ СССР халҡына һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында заемдар буйынса отоштар сифатында ғәйәт ҙур сумманы—17 миллиард һум самаһы аҡса түләне. Быйыл облигация тотоусыларға 5 миллиард һум отош түләнәсәк.

Хөкүмәт тарафынан сығарылған СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең государство заемы (1951 йылғы сығарылыш), элекке совет заемдары кеүек үк, илебеҙ хеҙмәтсәндәре интересларына тулыһынса яуап бирә. Был заемды таратыуҙан алынасаҡ средстволар халҡ хужалығын үҫтереү өсөн беҙҙең илебеҙҙең коммунизмға табан юл менән алға артабан хәрәкәт итеүе өсөн мөһим әһәмиәткә эйә буласаҡ.

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемы 30 миллиард һум күләмендә сығарыла. Яңы заем, һуғыштан һуңғы осорҙа сығарылған бөтә заемдар кеүек үк, отошло заем булып тора. Отоштарҙың дөйөм суммаһын йылына, уртаса алғанда, 4 процент тәшкил итә. Заемдың 20 йыллыҡ срогы эсендә бөтә облигацияларҙың 35 проценты отасаҡ. Ҡалған 65 проценте 1956 йылдың 1 октябренән алып заем срогы тамамланғанға тиклем ҡалған 15 йыл эсендә уларҙың номинальный хаҡы буйынса һатып алынасаҡ.

Отош тираждары 1952 йылдан алып йылына ике тапҡыр үткәреләсәк. 100 һумлыҡ облигацияға 25.000, 10.000, 5.000, 1.000, 500 һәм 200 һумлыҡ отош сығасаҡ.

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемын сығарыу Совет хөкүмәтенең мөһим хужалыҡ-политик сараһы булып тора. Ул 1951 йылғы халҡ хужалығы планын тормошҡа ашырырға ярҙам итәсәк, совет экономикаһының артабан сәскә атыуын һәм социалистик государство культураһының күтәрелешен, хеҙмәтсәндәр тормошоноң материаль кимәленең күтәрелеүен тәьмин итәсәк. Шикһеҙ, был заем бөтә совет халҡының берҙәм яҡлауын табыр һәм элекке бөтә заемдар кеүек үк үҙенең сығарылған суммаһынан байтаҡ арттырып таратылыр.

Подписка буйынса алынасаҡ облигациялар хаҡын түләү өсөн хеҙмәтсәндәргә 1951 йылдың майынан алып 1952 йылдың февраленә тиклем 10 ай ваҡыт биреләсәк. Шул уҡ ваҡытта эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм вуздарҙар беренсе взносты 1951 йыл май айының беренсе яртыһы өсөн эш хаҡынан, ә һуңғы взносты — 1952 йыл февраль айының икенсе яртыһы өсөн эш хаҡынан түләйҙәр. Элекке йылдарҙа Советтар Союзының күп кенә райондарының һәм өлкәләренең колхозсылары үҙ подпискаларының бөтә суммаһын заем сығарылғандан һуң беренсе көндәрҙә үк түләнеләр. Яңы заемды тарат ҡан ваҡытта колхоз крәҫтиәндәренең был данлы традицияһын бөтә саралар менән яҡларға һәм ауылда заем буйынса аҡса йыйнауҙың нигеҙҙә бер ай эсендә тамамланыуы өсөн тырышырға кәрәк.

Заемға подписка үткәреү — государство әһәмиәтендәге ҙур эш. Подписканы уңышлы үткәреү, ҡала һәм ауылдың һәр бер хеҙмәтсәненең заемда ҡатнашыуын тәьмин итеү, заем буйынса аҡсаны үҙ ваҡытында һәм тулыһынса йыйнау, — бөтә партия, совет, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының, Государство кредитына һәм һаҡлыҡ эшенә булышлыҡ итеү комиссияларының, беҙҙең бөтә общественностебеҙҙең бурысы.

Заемды таратыу буйынса бөтә эштә халҡ араһында массовый-политик агитация үткәреүгә сериөҙ иғтибар бирелергә тейеш. Яңы заемдың әһәмиәте тураһында һәр бер хеҙмәтсәнгә аңлайышлы итеп һөйләргә, халҡ хужалығын артабан үҫтереүгә һәм совет кешеләренең материаль көн-күрешен күтәреүгә заемдың ниндәй ҙур роль уйнарға саҡырылғанлығын конкрет миҫалдарҙа күрһәтергә кәрәк.

Заемға берҙәм яҙылып совет социалистик государствобыҙҙы — бөтә донъяла тыныслыҡ терәген тағы ла күберәк нығытабыҙ.

«СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемының» 100 һумлыҡ облигацияһының өлгөһө. 1951 йылғы сығарылышы. (ТАСС фотохроникаһы).

РЕСПУБЛИКАБЫҘ ХЕҘМӘТСӘНДӘРЕ ЯҢ[Ы] ЗАЕМҒА БЕРҘӘМ ЯҘЫЛАЛАР

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемына (1951 йылғы сығарылыш) подписка Өфө киҙе-мамыҡ комбинатында ҙур күтәренкелек менән [...]

Һүрәттә: туҡыу фабрикаһының эшсеһе Ф. Ибраһимова заемға яҙыла. [...] ике айлыҡ эш хаҡына заемға яҙылды.

М. Әхмәтъянов фото[...]

Ҙур ойошҡанлыҡ менән

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы государство заемына яҙылыу республикабыҙ хеҙмәтсәндәренең үҙ Ватанына тәрән бирелгәнлектәренең ҡеүәтле демонстрацияһына әйләнде. Ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа үткән күп халыҡлы митингеләрҙә һәм йыйылыштарҙа эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм колхозсылар СССР Министрҙар Советының яңы заем сығарыу тураһындағы ҡарарын ысын күңелдән хуплайҙар һәм ҙур берҙәмлек менән үҙҙәренең аҡсаларын государствоға бурысҡа бирәләр. Улар Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәтен нығытыу өсөн әҙер торғанлыҡтарын белдерәләр, яңы һуғыш тоҡандырыусыларҙың хыянатсыл эҙләнеүҙәренә бөйөк илебеҙҙең экономик ҡеүәтен тағы ла күтәреү менән яуап бирәләр.

Быйыл республикабыҙҙа яңы заемға яҙылыу, үҙған йылға ҡарағанда, тағы ла ойошҡанлыраҡ үтә.

Мәҫәлән, Өфө ҡала хеҙмәтсәндәре яңы заем сығарылыу тураһындағы хәбәрҙе радио аша ишеткәндән һуң үткән ике сәғәт ваҡыт эсендә үк 20 миллион һумлыҡ заемға яҙылдылар. Был, үҙған йылда ошо ваҡыт эсендә үткәрелгән подписка суммаһынан 5 миллион һумға артыҡ, тигән һүҙ.

Октябрьский хеҙмәтсәндәре ике сә[ғәт ваҡ]ыт эсендә 8 миллион 100 мең һ[ум], йәғни үҙған йыл ошо ваҡытҡа [ҡара]ғанда, 3 миллион һумға арт[ыҡ] суммала заемға яҙылдылар.

Черниковск ҡалаһында 2 сәғ[әт ваҡыт] эсендә үткәрелгән подписка сумм[аһы] миллион 817 мең һум тәшкил ит[те].

Ишембай хеҙмәтсәндәре ҡыҫҡа ва[ҡ]ыт эсендә 9 миллион 237 мең һ[умға] яҙылдылар. Беренсе номерҙа пр[омысла] 2 сәғәт эсендә яҙылған заем [сум]маһы айлыҡ эш хаҡына ҡар[аған]да [...] процент, ә икенсе номерҙа пр[омысла] 125 процент тәшкил итә.

Баймаҡ районы колхозсылары [...] ваҡыт эсендә 273 мең һум[ға яҙы]лып, был сумманы шунда уҡ түл[әп] аҡсалата индерҙеләр.

Зианчура районында Күгәрсен [урта]лыҡ мәктәбе уҡытыусылары [...] 30 минут эсендә 20 мең һумға [...] 10 мең һумын шунда уҡ аҡсал[ата ин]дерҙе.

Республикала заемға яҙылыу [ойошҡан]лыҡ менән дауам итә.

Беҙҙен заемдарыбыҙ—ул меңдәрсә яңы торлаҡтар

Черниковск. (Телефон аша). СССР Министрҙар Советының яңы заем сығарыу тураһындағы ҡарарын ҡаланың хеҙмәтсәндәре ҙур патриотик күтәренкелек менән ҡаршыланылар.

Яңы заем сығарыу тураһындағы хәбәрҙе радио аша ишетеү менән үк предприятиеларҙа, төҙөлештәрҙә һәм учреждениеларҙа күп халыҡлы митингеләр һәм йыйылыштар булып үтте.

Нефть эшкәртеү заводының иптәш Калышев етәкселек иткән цехта уҙғарылған митингела цехтың электриге иптәш Крылов һүҙ алды.

— Беҙҙең государствоға үтескә биреп торған средствобыҙ, — тине ул, — коммунизмдең грандиоз төҙөлештәрен йәйелдереүгә, хеҙмәтсәндәрҙең культуралы тормош кимәлдәрен артабан яҡшыртыуға китәсәк. Мин яңы заемға айлыҡ хеҙмәт хаҡымдан байтаҡ арттырып яҙылам.

— Беҙҙең халҡ заемдары, — тиҙе цехтың ҡарт операторы иптәш Мищенко, — хеҙмәтсәндәр өсөн меңдәрсә яңы торлаҡтар, яңы санаторийҙар, ял йорттары, культура-ағартыу у[чрежде]нәләре ул. Империалистар яңы һ[уғыш] ҡотороноп әҙерләнгән бер [...] илебеҙҙә коммунизмдең бөйөк т[өҙөлөш]тәре ҡалҡа йәйелә. Был бөтә донъя[ла тыныс]лыҡ фронтының нығыуы һәм [...] булып тора. Беҙҙең заемдарыбыҙ [комму]низмға барыу юлын тиҙләтәләр. [...]ҙең цехта яңы заемға бөтә [...] берҙәм яҙыласағына ныҡ ышан[ам. Мин] хеҙер 75 йәш. Нефть промышлен[носында] генә 40 йыл эшләйем инде. Үҙ[емдең аҡса]лыҡтарымды государствоға үтес[кә бирергә] теләк менән бирәм.

Заводтың күп кенә цехтарында заемға яҙылыу ике сәғәт эсендә [тамамлан]ды. Иптәш Осипенко начальнигы [булған] цех коллективе яҙылған сумм[а айлыҡ] хеҙмәт хаҡы фондының 120 [процентын] тәшкил итә.

Ҡаланың башҡа предприятиеларында [да] яңы заемға яҙылыу патриотик к[үтәренке]лек менән бара.

М. Ме[...]
(Үҙ хәбәр[себеҙ]).

Металлургтарҙың берҙәмлеге

Бәлорет. (Телефон аша). Ҡаланың предприятиеларында һәм учреждениеларында күп халыҡлы митингелар һәм йыйылыштар булып үтте. Хөкүмәт ҡарары радио аша тапшырылғас та яңы заемға яҙылыу ойошҡанлыҡ менән башланып китте. Белорет металлургия заводында подписка айырыуса уңышлы бара. Ҡаланың иң алдынғы эшсеһе, мартен цехының өлкән канавщиге иптәш Муллануp Хузиев 3 мең 400 һумлыҡ заемға яҙылды.

Ҡорос-сыбыҡ заводының төп цехтарында заемға яҙылыу ҙур ойошҡанлыҡ менән үтте. Начальниге иптәш Осетров булған цех коллективы тәүге көндә үк тулыһынса яҙылып бөттө. Эшселәр государствоға үтескә дүрт аҙналыҡ эш хаҡын бирҙеләр. Был цехтың трави итеү бүлеге мастеры иптәш Петров ике айлыҡ хеҙмәт [хаҡына,] бүлек начальниге иптәш М. [...] мең 400 һумға яҙылдылар. Ва[...] Ҡыям Ғабидуллин, Хәрдин, Күз[...] башҡа иптәштәр государство[ға айлы]лыҡтарынан икешәр-өсәр мең һ[умға яҙыл]дылар.

Был заводтың ҡанат цехы м[ас]тәш Иван Кочетков 1 мең 3[..] яҙылып, бөтә суммаһын ла и[...]

Ҡаланың һөнәрселек училищ[е] лектившда заемға яҙылыу [...] мәт хаҡы фондына ҡарата 110 [процент] тәшкил итә.

Дүртенсе майҙа сәғәт икеге [...] ла хеҙмәтсәндәре государствоға [...] миллион 700 мең һум бирҙеләр. [Подписка] дауам итә.

А. [...]

Тормошобоҙҙоң артабан сәскә атыуына

Бәрә. (Телефон аша). Районның колхозсылары үҙҙәренең һаҡлыҡтарынан күп суммаларҙы государствобыҙға үтескә ҙур теләк менән биреп торалар. Куйбышев исемендәге колхозда СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең (1951 йылғы сығарылышы) государство заемына яҙылыу Совет хөкүмәтенә һәм большевиктар партияһына тәрән бирелгәнлек рухында үтте.

Колхозсыларҙың кисергән ватанлыҡлы тойғоларын белдереп, тәүге партия ойошмаһы секретаре иптәш Зәһир Кәбиров уҙғарылған митингела былай тине:

— Һәйбәтле Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәте сәскә ата, тормошобоҙ әлеңән-әле яҡшыра бара. Беҙҙең гос[ударствоға] үтескә биреп торған һаҡлыҡ [...]быҙ коммунизмдең бөйөк төҙ[өлөштәрен] тиҙләтеү өсөн булышлыҡ итә[р, социа]листик ауыл хужалығын техни[к яҡтан] тағы ла күберәк байыҡтырыу[ға, тормо]шобоҙҙоң артабан сәскә атыуы[на хеҙмәт] итер.

Күп колхозсылар государство[ға] ҡа, үҙған йылға ҡарағанда, б[айтаҡ] күберәк аҡса бирҙеләр.

Буденный, Калинин Дзержинский [исе]мендәге ауыл хужалығы ар[тель] члендары яңы заемға бер-ике с[әғәт эсендә] үк яҙылып бөттеләр.

Х. С[...]

ГАЗЕТА—КОЛЛЕКТИВ ПРОПАГАНДИСТ ҺӘМ КОЛЛЕКТИВ АГИТАТОР ҒЫНА ТҮГЕЛ, УЛ ШУЛАЙ УК КОЛЛЕКТИВ ОЙОШТОРОУСЫ ЛА.

В. ЛЕНИН.

Ошо көндәрҙә «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының редакцияһы Өфө һәм Черниковск ҡалаларындағы промышленность һәм транспорт предприятиеларынан яҙышыусы хәбәрселәрҙең кәңәшмәһен уҙғарҙы.
Һүрәттә: кәңәшмәлә ҡатнашыусы актив хәбәрселәрҙән бер төркөм.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Беҙҙең тормоштоң көҙгөһө

Беҙҙең Өфө кинә-мамыҡ комбинаты коллективы, шулай уҡ бөтә хеҙмәтсәндәре кеүек ук, матбуғаттан башҡа йәшәй алмай. Совет матбуғаты кешенең белемен, аңын арттыра, тормошҡа марксистик ҡараш тыуҙыра һәм хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт [illegible].

Үткән йылдың һуңғы айында беҙҙең коллектив араһында 1951 йылға газета-журналдарға яҙылыу [illegible]. Был кампаниянан фабриканың партия һәм профсоюз ойошмалары матбуғат таратыу [illegible] «Союзпечать» работниктарына [illegible]. Ә «Союзпечать» работниктары был эшкә серьез ҡарамағандар, [illegible] газета-журналдарға яҙылыуға теләүселәр тураһында бөтәләй ҙә уйламағандар.

Фабриканың партбюроһы һәм профсоюз ойошмаһы был мөһим эште март айында ҡабаттан үткәреүҙе үҙ өҫтөнә алдылар. Партия һәм профсоюз члендарынан актив төркөм ойошторолдо, улар һәр бер эшсе һәм мастер менән әңгәмә үткәрҙеләр. Миңә лә был эштә актив ҡатнашырға тура килде.

Коллектив, партия һәм профсоюз ойошмаларының үткәргән был эшен ҙур ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршы алды. Һөҙөмтәлә бер нисә көн эсендә генә [illegible] 100 процентҡа [illegible]. «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһын ғына 107 дана таратылды. Подписчиктарҙың күбеһе [illegible].

Фабриканың йәштәре газета тураһында айырыуса [illegible]. «Газета беҙҙең көндәлек тормоштоң көҙгөһө [illegible]» [illegible].

Беҙ был эште урындағы активистарҙың ярҙамында киләсәктә лә дауам итәсәкбеҙ.

Ләйлә Ишназарова,
Өфө кинә-мамыҡ комбинаты еп иләү фабрикаһының профоргы.

Матбуғат таратыу эше яҡшыра

Большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте матбуғат таратыу эшенә ҙур иғтибар бирә, уға көндән-көн [illegible]. Шул арҡала матбуғаттың миллионлаған совет кешеләре [illegible] индивидуаль яҙылыу [illegible]. Матбуғатты [illegible] эшселәргә, колхозсыларға, интеллигенцияға еткереү бурысы [illegible]. Хәҙер партия һәм совет ойошмаларының ярҙамында [illegible] республикабыҙ [illegible] бөтәһе 115 мең дана Үҙәк газеталарҙы, шул иҫәптән «Правданы» 26,7 мең дана, «Известияны» 7,4 мең, «Комсомольская правданы» 12 мең дана таратылар. Хәҙерге көнгә таратылған бөтә газета һәм журналдарҙың дөйөм тиражы 500,4 мең дана тәшкил итә. Шуларҙың 81 проценты индивидуаль яҙылыу тәртибендә таратылған.

Большевистик матбуғат [illegible] масса араһында [illegible]. Беҙ республикабыҙ халҡына тағы ла яҡшыраҡ хеҙмәт күрһәтер өсөн бөтә көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ.

М. Балдина,
«Союзпечать»тың [illegible] бүлеге начальнигы.

Коллектив ҙур һынауҙы намыҫ менән үтте

ВКП(б) Өлкә Комитеты «Октябрьский натиск» типографияһы коллективы алдына ҙур һәм яуаплы бурыс — иптәш Сталиндең Әҫәрҙәрен башҡорт телендә сығарыу бурысын ҡуйҙы. [illegible] 1950 йылдың октябрь, ноябрь һәм декабрь айҙарында производство планын [illegible] 122 процентҡа, февралдә — 114 һәм мартта 104 процентҡа үтәне.

[illegible] иптәш Сталин Әҫәрҙәренең [illegible].

«Октябрьский натиск» типографияһы коллективы иптәш Сталин Әҫәрҙәренең [illegible] томын яҡшы сифатлы итеп срогынан алда баҫып сығарҙы. Шуның менән ВКП(б) Өлкә Комитетының һәм Башҡортостан хөкүмәтенең ышанысын намыҫ менән аҡланы.

Типография коллективы [illegible].

Коллектив иптәш Сталин Әҫәрҙәренең [illegible] яҡшы сифатлы итеп баҫып сығарыу өсөн бөтә көсөн һаласаҡ.

Р. Ғәбәйҙуллин,
«Октябрьский натиск» типографияһының директоры.

Стена газетаһын сығарыуҙа минең тәжрибәм

Беҙҙең [illegible] «Ҡыҙыл йондоҙ» ауыл хужалығы артеле ике ҙур ауылдан тора. Улар бер-береһенән [illegible] километр алыҫлыҡта. Шуға күрә стена газетаһын беҙ ике урында сығарабыҙ.

[illegible] газетаның 3-сө, 4-се номерҙарын [illegible].

Беҙ быға нисек ирештек һуң? [illegible] хәбәрселәрҙән килгән 7-8 ваҡ материал урынлаштырабыҙ. [illegible]

Ә. Шәрифуллина,
Бәләҙ районы, «Ҡыҙыл йондоҙ» колхозы уҡыу йорто мөдире.

Авторҙар—газетаның терәге

«Ленинсе» һәм «Ленинец» газеталарының сыға башлауына 3 ай ваҡыт үтте. Ошо ваҡытта йәштәр газетаһының 27 номеры сыҡты.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, газета үҙ тирәһенә авторҙар коллективын туплауҙа байтаҡ ҡына эштәр башҡарҙы ла инде.

Газета тирәһендә авторҙар коллективын туплау мөһим эш. Газетаның эстәлеге, уның ҡуйылған бурыстар кимәлендә булыуы — редакцияның авторҙар менән эшләүенә бик тығыҙ бәйләнгән. Редакция коллективы үҙенең эшен беренсе көндәрҙән үк авторҙар менән бәйләнеште ойоштороуға, улар менән даими хаттар алышыуға иғтибар бирҙе.

Хәҙер беҙҙең газета редакцияһы көндән-көн урындарҙан күп кенә хаттар ала башланы. Февраль айында редакция үҙенең райондарҙағы һәм ҡалалардағы йәш хәбәрселәренән 498 хат алды. Март айында алынған хаттар һаны 550-гә яҡынлашты. Апрель айында иһә редакция 690-дан артыҡ хат алды.

Ай һайын газетала баҫылған хәбәрселәрҙең материалдары арта бара. Алынған хаттарҙан февраль айында 148, мартта 161, ә апрель айында 190 материал баҫылып сыҡты.

Ошо үткән өс ай ваҡыт эсендә 100-ҙән артыҡ кеше редакцияға өс-дүрт һәм унан да күберәк хаттар ебәрҙе. Улар хәҙер редакция менән тығыҙ бәйләнеш тоталар. Редакцияға комсомол работниктәре, производство новаторҙары һәм стахановсылар, уҡытыусылар, яҙыусылар, колхозсылар, студенттар һәм уҡыусылар яҙалар. Беҙ айырыуса башлап яҙыусы шағирҙарҙан күп шиғырҙар алабыҙ.

Йәштәр газетаһы эшендә уҡытыусыларҙан А. Мөхтәруллин (Туймазы районы), З. Әһлиуллин (Учалы районы), студенттарҙан А. Чураҡаев, Н. Ғиләжев (Черниковск ҡалаһы), комсомол работниктәренән Г. Тимерғәлина (Бүздәк районы), Т. Шакиров (Бурай районы) һәм башҡа тиҫтәләгән иптәштәр актив ҡатнашалар.

Газетаның биттәрендә сыҡҡан 20-нән артыҡ материалда комсомол ойошмаларының, балалар учреждениеларының һәм мәктәптәрҙең эшендәге етешһеҙлектәр асылды.

Беҙҙең газета эшендә авторҙар менән эшләүҙә серьез етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Беҙҙең редакция коллективы ошо көнгә тиклем республикабыҙҙың бөтә райондарында ла үҙенең хәбәрселәрен булдыра алманы. Бына шуның өсөн дә үткән өс ай эсендә Бағаҙы, Баймаҡ, Благовар, Бөрйән, Дүртөйлө, Краснокама райондары тураһында беҙҙең газетала бер хәбәр ҙә баҫылып сыҡманы. Матрай, Мишкә, Покровка һәм Шаран райондарынан иһә бары бәрәр генә хат алынған.

Беҙҙең газетала тәнҡит хәбәрҙәре бик аҙ баҫылалар. Был редакция коллективы эшендә серьез етешһеҙлектәрҙең береһе булып тора. Комсомол ойошмаларының, балалар учреждениеларының, мәктәптәрҙең, пионер ойошмаларының эшендәге кәмселектәрҙе бөтөрөү тураһында газетаның йәш хәбәрселәре аҙ яҙалар, эштәге булған кәмселектәр ҡыйыу фаш итмәйҙәр.

Газета алдына ҡуйылған мөһим мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итеү бөтәһенән дә элек газетаның уҡыусылары һәм авторҙары менән бәйләнеште ойоштороуҙан тора. Газета уҡыусыларҙың хаттары — редакция өсөн иң ҡиммәтле әйбер. Үҙҙәренең хаттарында совет кешеләре, айырыуса йәштәр, беҙҙең ваҡыттың иң төп мөһим, актуаль темаларына яҙалар. Уларҙың күбеһе газета менән тығыҙ, даими бәйләнеш тоторға, уның эшендә актив ҡатнашырға теләйҙәр. Бында беҙ үҙебеҙҙең йәш хәбәрселәребеҙгә ярҙамға килергә бурыслыбыҙ.

Ғ. Ғарипов,
«Ленинсе» газетаһы редакторы.

Беҙҙең завод газетаһы

Стена газетаһы — күләме яғынан бәләкәй ул. Әммә уның эше ҙур. Ул агитатор ҙа, пропагандист та, яҡшы ойоштороусы ла. Ул хеҙмәттә булған ыңғай сифаттарҙы яҡшыртыу менән бергә, бөтә етешһеҙлектәрҙе ваҡытында асып һала һәм уларҙы бөтөрөү юлдарын күрһәтә.

Бына тик беҙҙең телефон аппараттары заводында «Еңеү өсөн» исемле стена газетаһынан ғына ла асыҡ күреп була. Уның даими редакторы—коммунист иптәш Ефимов. Уның етәкселегендә «Еңеү өсөн» газетаһы үҙенең алдына ҡуйылған бурыстарҙы тулыһынса үтәй. Ул үҙенең һәр бер номерында ыңғай факттарҙан башҡа тәнҡит мәҡәләләрен дә урынлаштыра. Шуға күрә беҙҙең стена газетаһы коллективта ҙур ихтирам менән файҙалана, эшселәрҙе, инженер-техник работниктарҙы үҙ тирәһенә туплай. Газетала ҡатнашыусыларҙың һаны йылдан-йыл арта бара. Уның хәбәрселәренең һаны быйыл байтаҡ артты. Улар араһында төрлө профессия кешеләре бар, Шуның өсөн уның тематикаһы ла бай. Иң актив хәбәрселәр булып Алябин, Семенова, Красиков, Ғәлиев, Бикбулатов, Сатаев һәм башҡа иптәштәр һаналалар.

Бынан башҡа заводтың һәр бер цехында «Молния» сығарыла. Һуңғы 4 ай ваҡыт эсендә заводта 40 номерҙан артыҡ стена газетаһы һәм 70-тән артыҡ «Молния» сығарылды.

Ә. Сәйфетдинов,
«Еңеү өсөн» стена газетаһы хәбәрсеһе.

Стена газетаһы—ойоштороусан көс

Йомағужа районы Воскресен ауыл Советы эргәһендәге территориаль партия ойошмаһының органы булған «Вперед» стена газетаһы (редакторы иптәш Арсланов) тәрән идея йөкмәткеле итеп сығарыла.

Газетаның 12 апрелдә сыҡҡан номерында «Яҙғы сәсеүҙе тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп үткәрергә» тигән баш мәҡәлә биргән. Был мәҡәләлә Воскресен ауыл Советына ингән «Красный Украинец» һәм Политотдел исемендәге колхоздарҙағы яҙғы сәсеүҙең төҙгө көндәренә анализ яһала, колхоздарҙың эшендәге етешһеҙлектәр ҡаты тәнҡитләнә һәм уларҙы бөтөрөү юлдары күрһәтелә.

Ошо уҡ номерҙа ауыл Советы председателе иптәш Пермяковтың «Яҡшы башланғыс» тигән хәбәре урынлаштырылған. Автор үҙенең хәбәрендә Политотдел исемендәге колхоздың тырмасыларынан Ә. Бикмәтов, Г. Ихсанов, М. Латипов иптәштәрҙең баҫыу эштәренең тәүге көндәрендә үк көндәлек нормаларын арттырып үтәүҙәре тураһында һөйләй.

Стена газетаһын сығарыуҙа колхозсылар, колхоз председателдәре, агроном, агитаторҙар, партия ойошмаһы секретаре яҡындан ҡатнашалар.

М. Мәхәмәдиев.

Газетабыҙҙың авторҙарынан бер төркөм. (Һулдан уңға): Б. Батырова — Социалистик Хеҙмәт Геройы, Ҡырмыҫҡалы районы Молотов исемендәге колхоздың шәкәр сөгөлдөрө үҫтереү мастеры; А. Әхмәров — агроном, Башҡортостан баҫыусылыҡ ғилми-тикшеренеү станцияһының ғилми сотрудниге; Ғ. Ашимов — Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министерствоһының бөртөклө ашлыҡ культуралары управлениеһының баш агрономы; Һ. Юлдыбаев — ветеринар врач, Башҡортостан малсылыҡ ғилми-тикшеренеү станцияһының ғилми сотрудниге; Ғ. Рафиков — Ҡырмыҫҡалы район Советы исполкомы председателе.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

БАШҠОРТ СОВЕТ МАТБУҒАТЫ ҮҪӘ

С. КУВАТОВ,
ВКП(б) Өлкә Комитетының матбуғат секторы мөдире

Царизм ваҡытында Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең тормошо эсе һәм ауыр булған. Улар батша самодержавиеһе һәм урындағы феодалдар тарафынан ҡаты иҙелгәндәр. Һигеҙек тә ваҡ милләт халыҡтары ағартыу нигеҙеү киҫергәндәр. Экономик һәм рухи иҙтар хоҡуҡһыҙ булғандар, хатта үҙ телдәрендә эш тә итә алмағандар. Үлеп бөтөүгә дусар ителгән булған башҡорт халҡын Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы ғына үлемдән ҡотҡарҙы һәм Башҡортостан халыҡтарына экономик, культура үҫешенең киң юлдарын асты. Большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте әлеккә иҙелгән илгән Россия халыҡтарына формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культура тыуҙырыуға киң мөмкинлектәр тыуҙырҙылар. Совет власы шарттарында ғына ваҡ милләт халыҡтары, Ленин — Сталин партияһы ихтыяры менән һәм бөйөк рус халҡының ағынан ярҙамында үҙҙәренең туған телендә эш итеүгә, күп һанда газета һәм китаптар баҫып сығарырға хоҡуҡ ала алдылар. Башҡорт халҡы ла, Ленин — Сталин партияһының милли политикаһын тормошҡа ашырып, туған әҙәби телен һәм матбуғатын барлыҡҡа килтерә алды.

Башҡорт телендә периодик матбуғаттың тыуыуы, Башҡортостанда Совет власы урынлашыу көндәренә тура килә. 1919 йылдың 23 мартында Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөлдө. Шул уҡ йылдың 14 сентябренән башлап Стәрлетамаҡта Башҡортостан хәрби-революцион комитет һәм хәрби-революцион комиссариат политбүлегенең органы сифатында «Башҡортостан хәбәрҙәре» тигән газета сығарыла башланы. 1922 йылдың 26 сентябренән башлап, республиканың үҙәге Өфөгә күсеүҙән, был газета Өфө ҡалаһында «Башҡортостан» исемендә, һуңынан, 1938 йылдың башынан алып «Ҡыҙыл Башҡортостан» исемендә сығарыла.

Республиканың үҙәге Өфөгә күскәндән һуң китап сығарыу эштәре лә башлана. 1922 йылдың 1 октябрендә Өфөлә китап баҫып сығарыу һәм китап һатыу эштәре буйынса «Башкнига» исемле пайсы товарищество төҙөлә. Ул тәүге бер йыл эсендә 9000 тираждан торған 10 китап сығарҙы. Шул йылдарҙан алып республикала башҡорт телендә китап һәм газета сығарыу артҡандан-арта барҙы. Бигерәк тә сталинсе биш йыллыҡтар осоронда башҡорт совет матбуғаты ныҡ үҫте. Мәҫәлән, башҡорт государство издательствоһы («Башкнига» 1929 йылда шулай үҙгәртелә башланы) 1930 йылда 783500 дана тираж менән 142 китап сығарһа, ә 1940 йылда 1 миллион 56 мең 400 дана тираж менән 1321 баҫма табаҡ күләмендә 260 китап сығарҙы. Быйыл издательство 1 миллион 800 мең дана тираж менән 2077 баҫма табаҡ күләмендә 365 китап сығарырға тейеш. Тимәк, «Башкнига»ның беренсе йыл сығарған продукцияһының күләме менән сағыштырғанда, быйыл китаптар һан яғынан 36,5 тапҡыр, тиражы яғынан 200 тапҡыр артыҡ сығарыласаҡ.

Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа газеталар һаны бик ныҡ артты. 1938 йылда бөтәһе 150 мең дана самаһы тираж менән 83 газета булһа, хәҙер 119 газета сығарыла. Уларҙың дөйөм тиражы 370 мең дананан тора. Шулар араһынан бөтәһе 100 мең дана тираж менән рус, башҡорт, татар телдәрендә өс республика газетаһы сығарыла; Белорет, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Черниковск һәм Октябрьский ҡалаларында ҡала газеталары сығарылалар. Республикабыҙҙың 63 районында 200 мең дана тираж менән 95 район газетаһы һәм унан тыш, заводтарҙа һәм төҙөлештәрҙә күп тиражлы 15 газета сығарыла. Ошо йылдың февраленән алып йәштәр өсөн ике телдә бер өлкә газетаһы сығарыла башланы. Республикабыҙҙа йәшәгән аҙсылыҡ милләт халыҡтары ла үҙ телдәрендә район газеталары уҡыйҙар. 95 район газетаһының 44-ө рус, 20-һе башҡорт, ҡалғандары татар, сыуаш, марий һәм удмурт телдәрендә сығарылалар.

Был һандар формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураның сәскә атыуын күрһәткән асыҡ факттар булып торалар.

Башҡорт совет матбуғаты эстәлеге яғынан да үҫә һәм байый бара. Республикабыҙҙа марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәре, рус һәм совет яҙыусыларының китаптары башҡортсаға тәржемә ителеп, күп тиражда баҫылып сығарылалар. Тик һуғыштан һуңғы йылдарҙа ғына Маркс һәм Энгельстең «Коммунистар партияһы манифесы», В. И. Лениндең ике томлыҡ һайланма әҫәрҙәренең беренсе томы һәм Иосиф Виссарионович Сталиндең биографияһы баҫылып сыҡты. Һуңғы 25 йыл эсендә В. И. Лениндең бөтәһе 45 әҫәре башҡорт теленә тәржемә ителеп сығарылған. Уларҙың дөйөм тиражы 230 мең дананан тора. Шулар иҫәбенән В. И. Лениндең «Ни эшләргә?», «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа», «Демократик революцияла социал-демократияның ике тактикаһы», «Рус социал-демократтарының бурыстары», «Государство һәм революция», «Коммунизмда балаларса «һуллыҡ» ауырыуы», «Империализм — капитализмдең юғары стадияһы» һәм башҡа әҫәрҙәре һәр ҡайһыһы айырым китап итеп сығарылдылар.

Иосиф Виссарионович Сталин әҫәрҙәрен башҡорт телендә сығарыу киң ҡолас алды. 1930 йылдан алып 1950 йылға тиклем булған 20 йыл ваҡыт эсендә иптәш Сталиндең 132 әҫәре башҡортсаға тәржемә ителеп, 3 миллион 959 мең дана тираж менән сығарылған. Шулар араһынан «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы» 100 мең дана тираж менән сыҡты. Үҙған 1950 йылда ғына Башгосиздат 10 һәм 15 мең дана тираж менән иптәш Сталиндең «Ленинизм мәсьәләләре», «Ленинизм мәсьәләләренә ҡарата», «Ленинизм нигеҙҙәре тураһында» тигән әҫәрҙәрен сығарҙы.

Быйыл Башгосиздат иптәш Сталиндең 16 томдан торған Әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итеп сығарыу эшенә тотонды һәм беренсе томы баҫылып сыҡты ла инде. Был башҡорт халҡы тормошонда ҙур тарихи ваҡиға булып тора. Издательствоның планы буйынса 1951 йылда иптәш Сталин Әҫәрҙәренең тағы ла өс томы һәм В. И. Лениндең ике томлыҡ һайланма әҫәрҙәренең икенсе томы сығарыласаҡ.

Хәҙер башҡорт халҡы Пушкин, Гоголь, Лермонтов, Тургенев, Максим Горький, Маяковский, Фадеев, Николай Островский һәм башҡа рус яҙыусыларының әҫәрҙәрен үҙ телдәрендә уҡый. Һуңғы өс йыл эсендә генә А. С. Пушкиндең, В. Г. Белинскийҙең һайланма әҫәрҙәрен, Маяковскийҙең «Владимир Ильич Ленин», Н. Островскийҙең «Ҡорос нисек сыныҡты», В. Василевскаяның «Йәйғор», А. Фадеевтың «Йәш гвардия», М. Бубенновтың «Аҡ ҡайын», П. Павленконың «Бәхет», Ю. Лаптевтың «Таң», Е. Кошеваяның «Улым тураһында хикәйә», Семен Бабаевскийҙың «Алтын йондоҙ кавалеры», Д. Фурмановтың «Чапаев» һәм башҡа яҙыусыларҙың әҫәрҙәре башҡорт телендә сығарылдылар.

Башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен сығарыу йылдан-йыл арта бара. Башҡорт әҙәби телен нигеҙләүсе һәм башҡорт художество әҙәбиәтенең классигы Мәжит Ғафури революцияға тиклем үҙенең әҫәрҙәрен сығара алмайынса интеккән булһа, хәҙер Башҡорт государство издательствоһы уның әҫәрҙәрен меңләгән тираж менән сығара. Тик үҙған йылда ғына М. Ғафуриҙың «Һайланма әҫәрҙәре» 37 баҫма табаҡ күләмендә, 4 мең дана тираж менән сығарылды. Башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре 1945 йылда 96 мең дана, 1946 йылда 114 мең дана, 1947 йылда 123 мең дана тираж менән сығарылған булһа, 1951 йылда 300 мең дана тираж менән сығарыласаҡ. Һуңғы бишә йылда ғына Сәйфи Ҡудаштың һайланма әҫәрҙәренең ике томлығы, «Минең республикам» һәм башҡа әҫәрҙәре бөтәһе 26 мең дана тираж менән сыҡты. Шулай уҡ М. Кәрим һәм С. Агиш әҫәрҙәре 30 мең дана тираж менән сығарылды. Рашит Ниғмәтиҙең «Большевик» поэмаһы һәм Кирәй Мәргәндең «Ҡарыш-тау итәгендә» тигән романы. Ә. Бикчәнтәйҙең «Үлемһеҙлеккә хоҡуҡ» тигән повесы һәм башҡа күп кенә китаптар башҡорт уҡыусыларына ҙур бүләк булып торалар.

Туған телдә башҡорт мәктәптәре өсөн күп һанда дәреслектәр һәм методик ҡулланмалар сығарыла. Тик 1951 йылда ғына башланғыс һәм урта мәктәптәр өсөн тиражы 335 мең дананан торған 45 дәреслек сығарыласаҡ.

Партия, Совет хөкүмәте һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин башҡорт совет матбуғатын үҫтереүгә ныҡлап ярҙам күрһәтәләр. Тик һуңғы йылдарҙа ғына иптәш Сталиндең хәстәрлеге арҡаһында республикабыҙ күп һанда полиграфоборудованиелар: линотиптар, печать машиналары, хәрефтәр алды. Башҡорт государство издательствоһы ҡайтанан киңәйтелеп ҡоролдо һәм журналистар әҙерләү буйынса өлкә партия мәктәбе эргәһендә газета работниктары бүлеге асылды. Быйыл шул уҡ мәктәп янында тәржемәселәр әҙерләү бүлеге асыласаҡ һәм унда 20 кеше ҡабул ителәсәк. Республикабыҙҙың баш ҡалаһы — Өфөлә киләсәк ике-өс йыл эсендә полиграфкомбинат һалынасаҡ.

Республикабыҙ халҡы ҡорамтарҙа сынығҡан Ленин — Сталин партияһы һәм даһи Сталин етәкселегендә Советтар иленең башҡа туғандаш халыҡтары менән бергә ҙур аҙымдар менән алға — коммунизмға табан бара. Беҙҙең китаптарыбыҙ, газеталарыбыҙ, ВКП(б) Үҙәк Комитетының органы ленинсе-сталинсе «Правда» өлгөһендә коммунизм идеяларын бөйөк хәҡиҡәтле киң халыҡ массаларына еткереп барырға, Ленин — Сталин партияһының алдан билдәләнгән фекерен тормошҡа ашырыу өсөн арымай-талмай эшмә-эштәке көрәшергә, хеҙмәтсәндәрҙе хужалыҡ һәм культура төҙөлешендә яңы уңыштарға, коммунизмдың еңеүе өсөн көрәшкә күтәрергә һәм ойоштороуға тейештәр.

Бөгөнгө көндәң ошо талаптарына яуап бирерлек итеп яҡшы йөкмәткеле һәм культуралы эшләнгән китап һәм газеталар сығарыу бөтә газета работниктарының, журналистарҙың, яҙыусыларҙың һәм полиграфистарҙың көндәлек иң мөһим эше булып тора.

Баҫыу стандарында агит-массовый эш

Өйәлил. Район колхоздарының баҫыу станларында һәм трактор бригадаларында яҙғы сәсеү эштәренең беренсе көндәренән ук массовый-политик эш киң ҡолас алды. Калинин һәм Шәймәратов исемендәге колхоздарҙа, «Красная Башкирия» һәм Пэшеа совхоздарында агит-массовый эш айырыуса яҡшы ҡуйылған. Унда агитаторҙар төшкө ял ваҡытында баҫыуҙа эшләүселәргә ... газета уҡыуҙар ойоштороу, газета материалдары буйынса бесәҙәләр үткәрәләр. Бригадаларҙа систематик рәүештә стена газеталары һәм боевой листоктар сығарылып тора.

Ә. Йәғәфәров.

Культбригада колхоздарҙа

ВКП(б)-ның Маҡар район комитете колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәрендәге колхозсыларҙы һәм механизаторҙарҙы культуралы хеҙмәтләндереү өсөн культбригада ойошторҙо.

Культбригада районындағы Калинин исемендәге, «III Интернационал», «Большевик», «Байгужа», «Ударник» һәм башҡа колхоздарҙа булды.

Ул колхозсылар өсөн колхоз клубтарында драматург Е. Кравченконың «Ҡыҙыл ваҡыт» пьесаһын ҡуйҙылар һәм концерт номерҙәре күрһәттеләр. Тамашасылар культбригаданың эшенә юғары баһа бирҙеләр.

С. Макарский.

Китап уҡыусылар конференцияһы

Иҫәнгол. Зианчура районы культура йортонда китап уҡыусылар конференцияһы булып, бында 150-гә яҡын кеше ҡатнашты. Унда ҡатнашыусылар яҙыусы Б. Полевойҙың «Беҙ—совет кешеләре» тигән китабы буйынса Иҫәнгол урта мәктәбендә тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы Л. Якупованың докладын тыңланылар.

Китапты тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙан 13 кеше доклад буйынса сығыш яһаны. Үргән урта мәктәбенең 10 класс уҡыусыһы Камалова үҙенең сығышында йәштәрҙе «Беҙ—совет кешеләре» әҫәренең геройҙары кеүек үк Тыуған илебеҙ өсөн фиҙакәр көрәшергә саҡырҙы.

Республикала быйылғы футбол сезоны

Футбол сезоны башланды. Быйыл Өфө һәм Черниковск ҡалаларында РСФСР ярыштары өсөн яҙғы матчтар буласаҡ.

РСФСР-ҙың Урал зонаһында беренсе группала Сталин исемендәге завод командаһы (Молотов ҡалаһы), «Динамо» (Ижевск), Калинин исемендәге Спорт клубы (Молотов ҡалаһы), «Спартак» (Өфө), Черниковск ҡалаһы командаһы, Свердловск ҡалаһы командаһы, «Авангард» (Свердловск), «Дзержинец» (Свердловск), «Динамо» (Свердловск) һәм Ижевск машиналар төҙөү заводы командалары ҡатнашасаҡ.

Ошо уҡ зонаның икенсе группаһында «Динамо» (Өфө), «Динамо» (Челябе), Киров исемендәге завод командалары (Молотов ҡалаһы), «Дзержинец» (Н-Тагил), «Трестметалл» (Каменск-Уральск), «Металлург» (Н-Тагил), Воткинск ҡалаһының машиналар төҙөү заводы командаһы, «Химик» (Березняки ҡалаһы), «Динамо» (Молотов ҡалаһы), «Металлург» (Магнитогорск) командалары осрашасаҡтар.

Ярыштар 13 майҙан алып 15 сентябргә тиклем дауам итәсәк.

Өфө ҡалаһының өсөнсө номерлы мәктәп уҡыусылары 1 Май демонстрацияһында.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Ашламаларҙы ҡулланыу

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыуҙарында урожайҙы күтәреүҙә мөһим сараларҙың береһе — ашламалар ҡулланыу. Был эш өсөн йыл һайын бик ҙур средство тотола. Ләкин, байтаҡ урындарҙа ашламаларҙы дөрөҫ ҡулланмау арҡаһында тотолған средстволар хаҡы аҡланмай ҡалғылай.

Бында төп сәбәп ашламаларҙың тупраҡҡа үҙ ваҡытында индерелмәүендә, уларҙы тупраҡта тейешле тәрәнлеккә күмдерелмәүендә, баҫыуҙарҙың ныҡ ҡыйланған булыуында, тупраҡта дымдың ашламалар талап иткән күләмдә һаҡланмауында тора. Бына шулар һөҙөмтәһендә индерелгән ашламалар көтөлгән һөҙөмтәне бирә алмайҙар. Быларҙан тыш, был эшгә шулай уҡ ашламаларҙы ҡулланыуҙың ысулдары ла һәм формалары ла ҙур әһәмиәт тота.

Агробиология фәне һәм практика гранул ашламалары ҡулланыуҙың ҙур эффектле булыуын күрһәтәләр. Мәҫәлән, бер центнер гранулллы суперфосфаттың урожайҙы күтәреү йоғонтоһо порошок хәлендәге 3 центнер суперфосфат йоғонтоһона тин килә. Был, ашламаларға экономия яһарға һәм шул иҫәптән ашландырылған майҙандарҙы күбәйтергә мөмкинлек бирә.

Гранулдар яһау ауыр эш түгел. Уны һәр бер хужалыҡта әҙерләргә мөмкин. Суперфосфат гранулы, ғәҙәттә, һөлө ҡабыҡтарына ҡушып эшләнә. Ин тәү һөлө ҡабыҡтары иләк аша үткәрелеп, ҡый үләндәре орлоҡтарынан таҙартыла. Бер центнер гранул яһау өсөн 10 килограмм һөлө ҡабығы һәм 90 килограмм суперфосфат алына. 5 силәк һөлө ҡабығы бер силәк һыу менән сылатыла. Бында һыу урынына тиреҫ шыйыҡсаһы алынһа, тағы ла яҡшыраҡ була. Һыуланғандан һуң бер сәғәт ваҡыт үткәс, ул 8 — 10 сантиметр ҡалынлыҡта таратыла һәм уға 3 — 4 таңҡыр суперфосфат ҡатнаштырыла. Һәр бер ҡатнаштырыуҙа ул ҡул тырмаһы менән болғатыла. Шунан һуң, был ҡатнашма йоҡа ғына итеп таратыла һәм киптерелә. Бында гранул төйөрҙәренең ҙурлығы буйҙай бөртөктәре күләмендә булдырылырға тейеш. Бының өсөн ул иләк аша үткәрелә һәм ҙур төйөрҙәр ваҡландырыла.

Урындағы ашламаларҙы ла гранулалаштырырға мөмкин. Быныҡ өсөн ваҡланған серегән тиреҫ, һыйырҙың, һарыҡтың йәки ҡоштарҙың тиҙәге иләк аша үткәрелә һәм тигеҙ күләмдәрҙә көл ҡатнаштырыла. Ул һыу йәки тиреҫ шыйыҡсаһы менән бер центнер гранул өсөн 4 — 5 силәк иҫәбенән сылатыла.

Билдәле булғанынса, порошок хәлдәге суперфосфатты сәсеү орлоғона ҡатнаштырыу ярамай, сөнки ул орлоҡтоң сығышын кәметеүе мөмкин. Шуға күрә бында комбинировать ителгән сәскестәрҙе ҡулланыу йәки ашлама индереү менән орлоҡ сәсеүҙе айырым рәүештә үткәреү талап ителә. Ә инде суперфосфатты гранулллаштырып ҡулланғанда бындай мәшәҡәттәр булмай, гранулдарҙы орлоҡтар менән бергә сәсергә ярай. Бында ябай сәскес машинаһы ҡулланыла, ул кәрәкле сәсеү нормаһына ҡулайлаштырыла.

Орлоҡто сәскәнгә тиклем тупраҡҡа ашлама индерелһә, уның бер ни тиклем өлөшө тупраҡ ҡатламдарындағы атмосфера һыуҙары менән йыуыла йәки ул йыуылып баҫыуҙан бөтөнләй ситкә ағыҙыла. Шулай уҡ индерелгән ашламаны ҡый үләндәре файҙаланып үҫә. Ин аҙаҡ килеп, тупраҡтағы күп һаплы бактериялар ашламаларҙы ашайҙар. Быларҙың бөтәһе ашламаларҙың эффектле булыуын юғалтыуға алып бара. Ашламаларҙы гранулллаштырып ҡулланғанда бөтә был етешһеҙлектәр бөтөрөләләр. Был гранул ашламаларҙың өҫтөнлөктәрен күрһәтә. Шуға күрә гранулллы ашламалар ҡулланыуҙы киң рәүештә ойоштороорға кәрәк.

П. Бульчук,
Шишмә селекция станцияһының биохимия лабораторияһы мөдире.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Ни өсөн Ғафури районында „Колхозник“ спорт обществоһы төҙөлмәй?

Ғафури районының йәштәре РСФСР һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының «Колхозник» ирекле спорт обществоһы төҙөү тураһындағы ҡарарҙарын ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланылар һәм районда «Колхозник» обществоһы коллективтәре ойошторолоуға ҡарата һис бер ниндәй шик юҡ ине.

Ләкин хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советы исполкомы үҙ иәүбәтендә ошо обществоны төҙөү тураһында ҡарар сығарыу һәм ойоштороу комитеты төҙөү менән генә сикләнеп ҡалды. Ошо көнгә тиклем бер генә колхозда ла был обществоның түбәнге коллективтәре төҙөлмәгән.

С. Усманов.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 30 апрель. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 30 апрелдә нәүбәттәге ултырышы булып үтте. Франция вәкиле Пароди председателлек итте. Пароди һәм СССР вәкиле иптәш Громыконың сығышынан һуң ултырыш ябылды.

* * *

ПАРИЖ, 2 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 2 майҙа 42-се ултырышы булып үтте. Великобритания вәкиле Дэвис председателлек итте.

Билдәле булыуынса, 27 апрелдә өс держава вәкилдәре көн тәртибенең ҡайтанан ҡаралған проектын индергәйнеләр. Был проект, СССР вәкиле Громыко үҙенең сығыштарында күрһәткәнсә, тыныслыкты тәьмин итеүҙең мөһим проблемаларын бөтөнләй ситләтеп үтә йәки буяп ҡалдыра.

Һуңғы ултырыштарҙа йәйелдерелгән дискуссия барышында АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре көн тәртибе буйынса үҙ тәҡдимдәрен яҡлап ниндәй ҙә булһа ышандырырлыҡ дәлилдәр килтерә алманылар. Уларҙың позицияһы бөтә илдәр халыҡтарының общественный фекеренә яһаған уңайһыҙ тәьҫирҙе йомшартырға ынтылып, көнбайыш державаларҙың делегациялары 2 майҙа көн тәртибенең өс яңы вариантын «һайлап алырға» тәҡдим итеп яңы манёвр яһаны.

«А» хәрефе менән билдәләнелгән беренсе вариант, Джессеп белдергәнсә, «көн тәртибе буйынса килешеүҙе тәьмин итеү өсөн өс делегация тарафынан яһалған максимум тырышлыҡ булып тора». Был вариантта Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәлә беренсе пунктта күрһәтелгән башҡа мәсьәләләр араһында беренсе урынға ҡуйылған. Ләкин, Джессептең белдереүенә ҡарағанда, Германияны демилитаризациялау тураһындағы пунктты беренсе урынға ҡуйырға совет тәҡдимен өс делегация тик бөтә көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшелгән шарттарҙа ғына ҡабул итә. «А» вариантында Триест тураһындағы мәсьәлә СССР делегацияһы тәҡдим иткәнсә, атап әйткәндә, «Италия менән тыныслыҡ договорының Триескә ҡағылған өлөшөн үтәү» тип формулировать ителә. Ләкин был мәсьәлә буйынса совет формулировкаһын ҡабул итеү өсөн, өс держава вәкилдәренең сығыштарынан күренгәненсә, шулай уҡ тотош алғанда бөтә көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү шарты ҡуйыла. Быг, айырым алғанда Джессептең «А» вариантын өс делегация тотош алғанда көн тәртибе сифатында тәҡдим итә, унда «бөтә пункттар ҙа үҙ-ара бәйләнештә торалар, бер-береһенә бәйләнгәндәр». «А» варианты өс делегация тарафынан 27 апрелдә килтерелгән көн тәртибе проектынан башҡаса бер нисек тә айырылмай. Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуға ҡағылған мәсьәлә кеүек мөһим мәсьәләнең формулировкаһы ла үҙгәрешһеҙ ҡалдырылған. «А» вариантында шулай уҡ Европала йәшәп килгән көсөргәнешлекте бөтөрөү проблемаларына һәм дүрт бөйөк держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға турана-тура мөнәсәбәте булған Атлантик пакт һәм Американың сит территорияларҙағы хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә лә юҡ.

Джессеп үҙенең сығышында «А» вариантын совет делегацияһының фекер ҡарашына «серьез уступка» итеп күрһәтергә маташты. Ләкин, тине ул, совет делегацияһы «А» вариантты менән риза булмаһа, көнбайыш державаларҙың делегациялары көн тәртибенең «В» хәрефе менән билдәләнгән икенсе вариантын тәҡдим итәләр.

Был вариант буйынса, Германияны демилитаризациялау тураһындағы пункт өсөн көн тәртибендә бирелергә тейешле булған урын тураһындағы мәсьәлә, Министрҙар Советы был мәсьәләне үҙе хәл итһен өсөн, «асыҡ ҡалдырыла». «В» варианты шулай уҡ ҡоралланыуҙар һәм ҡоралды көстәр тураһындағы мәсьәлә буйынса, ниндәй формулировка ҡабул ителергә тейешлеген министрҙар үҙҙәрен хәл итһендәр өсөн, совет делегацияһы тарафынан да шулай уҡ көнбайыш державаларҙың делегациялары тарафынан да индерелгән ике формулировканы ла көн тәртибендә ҡалдырыуҙы күҙҙә тота. Башҡа яғынан «В» варианты «А» вариантынан бер нимә менән дә айырылмай. Аҙаҡ килеп Джессеп өс делегация исеменән көн тәртибенең «С» хәрефе менән билдәләнгән өсөнсө вариантын да тәҡдим итте. Джессептең үҙенең таныуы буйынса ул «дүрт держава министрҙәре тикшерергә тейешле булған мәсьәләләрҙе саф тактик рәүештә яйлалаштырып йомшартыу» булып тора. Был вариант СССР делегацияһы тарафынан ҡуйылған конкрет мәсьәләләрҙе ғөмүмән урап үтә һәм көн тәртибен иң дөйөм, томанлы һәм таркау һүҙҙәр менән формулировать итә, Германияны демилитаризациялау, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын ҡыҫҡартыу, Атлантик пакт һәм сит территорияларҙа Американың хәрби базалары кеүек хәҙерге халыҡ-ара хәл өсөн хәл иткес булған мәсьәләләрҙең әҙен дә ҡалдырмай.

Джессептән һуң сығыш яһаған Пароди эште йәнәһе өс держава делегацияларының яңы тәҡдимдәре «тупиктән сығыуға алып барыусы» юл булып тора, тип күрһәтергә маташты.

Великобритания вәкиле Дэвис, өс держава делегацияларының бөгөнгө тәҡдимдәре был делегациялар унан ары «китә алмаған сик булып тора» тине.

Һуңынан өс держава делегацияларының яңы тәҡдимдәре айҡанлы иҫкәрмәләр менән СССР вәкиле Громыко сығыш яһаны. Ул Джессеп, Пароди һәм Дэвистең, йәнәһе, СССР делегацияһы тотош көн тәртибе буйынса тәҡдимдәр индермәне, тип раҫлауҙарын нигеҙлекһеҙ, тип кире ҡаҡты. Бындай раҫлауҙар, тине Громыко, билдәле ысынбарлыҡҡа ярашлы түгелдәр, сөнки СССР делегацияһы тарафынан да шулай уҡ өс держава делегациялары тарафынан да индерелгән бөтә тәҡдимдәр буйынса совет делегацияһының позицияһы етерлек тулы, етерлек *асыҡ рәүештә* һөйләп бирелде. Шулай уҡ, өс держава вәкилдәре имеш улар килешеүгә өлгәшеүгә булышлыҡ итеү өсөн мөмкин булған бөтә нәмәне эшләнеләр һәм килешеүгә өлгәшеү юлында имеш совет делегацияһының позицияһы тотҡарлыҡ булды, тип күрһәттеләр. Шул уҡ ваҡытта улар үҙҙәренең быға тиклем индерелгән тәҡдимдәренең төрлө варианттарын яңынан ҡабатлайҙар. Улар үҙ тәҡдимдәренең бер нимәһен дә үҙгәртмәнеләр, уларҙың асылын тулайынса ҡалдырҙылар. Шуға күрә беҙ, белдерҙе Громыко, өс держава вәкилдәренең килешеү өсөн бөтә нәмәне эшләнек, ә совет делегацияһының имеш килешеүгә өлгәшеүҙе ҡыйынлаштырыуы тураһындағы раҫлауҙарын бөтөнләй нигеҙһеҙ, тип кире ҡағабыҙ.

— Беҙҙең күрһәтеп үтеүебеҙсә, тип белдерҙе унан һуң СССР вәкиле, совет делегацияһының әҙләкһеҙ уступка ... көтергә ярамай.

Унан ары Громыко өс державаның «В» һәм «С» варианттарында килтерелгән тәҡдимдәренә ентекләп туҡталды.

Дэвистең өс держава делегацияларының яңы тәҡдимдәре «Ультиматум булмай» тип белдереүе тураһында ... Громыко былай тине:

— Өс держава вәкилдәренең был тәҡдимдәр улар үҙ формулировкаларын ... гәртеүҙә артабан китә алмаҫлыҡ ... лып тора, тип белдереүҙәрен нисек ... һаларға? Өс делегацияның проекты айырым пункттары буйынса килешеү ... тотош проект буйынса килешеүгә ... гән, был проектта бөтә мәсьәләләр ... береһе өсөн шарт булып торалар, ... белдереүҙәрен нисек баһаларға? ... ультиматив тәҡдимгә оҡшамағанмы?

— Беҙ, — тип һыҙыҡ өҫтөнә ... СССР вәкиле, — төп проблемалар ... ҡайҙа ла китмәйәсәкбеҙ, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне беҙ ... серьез ҡарарға теләйбеҙме йәки теләмәйбеҙме? Уның әһәмиәтен иҫәпкә ... Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләгә ул алырға тейешле ... ған урынды бирергә беҙ теләйбеҙме, теләмәйбеҙме? Дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға ... ысындан да мөһим мәсьәләләрҙе (Атлантик ... хәрби базалар тураһындағы мәсьәлә ... бына шундай булып тора) беҙ ҡарарға теләйбеҙме йәки теләмәйбеҙме?

Беҙ бындай мәсьәләләрҙе һәр төрлө мәғәнә биреүсе формулировкаларға ... рә алмайбыҙ, сөнки был мәсьәләләр ... мошто үҙе тарафынан ҡуйылған ... уларҙы әҙләп торорға кәрәкмәй, ... ҡиғалар үҫешенең барышы тарафынан ҡуйылғандар, улар өс державаның ... ланыуҙы ҡыуыуға, Германияны ... таризациялауға һәм герман ... аяҡҡа баҫтырыуға йүнәлтелгән ... тарафынан ҡуйылғандар, улар АҠШ ... күмәтенең сит территорияларҙа ... Союзына һәм халыҡ демократия ... на ҡаршы йүнәлтелгән хәрби база ... ҙәү политикаһы тарафынан ҡуйылған.

Совет делегацияһы, тине Громыко, ... таҡлау һүҙендә, көнбайыш державалар делегацияларының яңы тәҡдимдәре ... *лы был ултырышта яһарға тейеш* ... ҡан иҫкәрмәләр бына шундайҙар. Беҙ ... СССР делегацияһы кәрәк булһа ... был тәҡдимдәр буйынса башҡа ... ләрҙе лә яһау хоҡуҡын үҙендә ...

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 3 май. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 3 майҙа ошоларҙы хәбәр итте:

Бөтә фронттарҙа ла Халыҡ армияһының частәре, Ҡытай добровольцтәренең отрядтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Америка-Англия интервенттәренә ҡаршы актив һуғыш хәрәкәттәрен алып баралар, дауам иттерәләр.

3 майҙа Халыҡ армияһының ... дошмандың 10 самолетын атып төшөрҙөләр.

Республиканың Верховный Судында төп законды боҙоуға юл ҡуялар

Сталинсә Конституция нигеҙендә барлыҡҡа килгән Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 78-се статьяһында: «**Башҡорт АССР-ында суд эше халыҡтың күпселеге башҡорт, рус, татар, марий йәки сыуаш булған ауыл райондарында, ҡала райондарында һәм поселкаларҙа, шуға ярашлы рәүештә, башҡорт, рус, татар, марий һәм сыуаш телдәрендә, ә үҙәк суд учреждениеларында башҡорт, рус һәм татар телдәрендә алып барыла, был телдәрҙе белмәүсе кешеләр өсөн эш материалдары менән тәржемәсе аша тулы танышыу, шулай уҡ судта үҙ телендә һөйләү хоҡуҡы тәьмин ителә**», тип әйтелә.

Ошо уҡ Конституцияның 79-сы статьяһында: «Башҡорт АССР-ының бөтә судтарында эштәрҙең ҡаралыуы, әгәр айырым яһау закон тарафынан күҙҙә тотолмаған булһа, асыҡ рәүештә алып барыла, ғәйепләнеүселәргә үҙен яҡлау хоҡуҡы тәьмин ителә», тиелгән.

Ләкин, төп законда ҡаралған был принциптар ныҡлы күҙәтелмәһә урында, республиканың ҡайһы бер суд органдары, шул иҫәптән Башҡорт АССР-ы Верховный Суды тарафынан да боҙолоуға юл ҡуйыла. Уны Верховный Судтың председателе иптәш Сайпушевтан алып, коллегия председателдәренән иптәш Ожгихин, шулай уҡ Верховный Судтың айырым членддәре, хатта йыш ҡына ваҡытта секретарҙәре лә боҙалар.

Юғарыла әйтелгәндәрҙе ҡайһы бер халыҡ судтарында һәм республиканың Верховный Судында ҡаралып үткән күп кенә эштәрҙән күрергә була. Беҙ шуларҙан өсдүрт фактҡа ғына туҡталайыҡ.

Шулай, үткән йылдың август айында Бишбүләк районының икенсе участка халыҡ судына «Государство һәм общественный милкте урлаусыларҙы уголовный яуаплылыҡҡа тарттырыу» тураһында СССР Верховный Советы Президиумының 1947 йыл 4 июнь Указының дүртенсе статьяһы нигеҙендә яуапҡа тарттылыусы Шәмсиә Илнәтуллина, Солтанбикә Закированың эше инә. Ғәйепләнеүселәр рус телен бөтөнләй белмәйҙәр. Уларҙың эштәрен тикшергәндә район прокуроры эште тәржемәсе аша алып бара, ә ғәйепләү заключениеһе рус телендә яҙыла.

Эште ҡарағанда ғәйепләнеүселәр халыҡ судынан тәржемәсе һоранылар. Халыҡ суды был һорауҙы ҡәнәғәтләндерәп, 1950 йылдың 30 августында ҡарар ҙа ҡабул итте. Ә ысынбарлыҡта халыҡ судьяһы иптәш Адаев етәкселегендә алып барылған суд ултырышы ҡарарҙы үтәмәне. Ғәйепләү эше тәржемәсеһеҙ, рус телендә ҡаралды һәм хөкөм ҡарары рус телендә сығарылды. Шуныһы ғәжәп, судта государственный ғәйепләүсе булып район прокуроры иптәш Петров ҡатнашһа ла, ни өсөндәр ул суд эшен алып барыуҙа законда ҡаралған тәртипте боҙған, судья Адаев хаҡында бер нәмә лә әйтмәй, уға закон боҙорға тулы ирек бирә.

Хөкөм ителеүселәр 1950 йылдың сентябрь айында Башҡорт АССР-ы Верховный Судына башҡорт телендә кассация биргәндәр. Ул иптәш Ожгихин етәкселегендәге һәм Верховный Суд членддәре Зайцев, Минаев иптәштәр ҡатнашлығындағы коллегияла ҡарала. Ләкин кассация башҡорт телендә яҙылыуға һәм халыҡ суды ултырышы протоколында хөкөм ителеүселәрҙең тәржемәсе һорауҙары тураһында яҙылған булыуға ҡарамаҫтан, коллегия уны тәржемәсеһеҙ ҡараны. Шулай итеп Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 78-се статьяһын иптәш Ожгихин етәкселегендәге енәйәт эштәрен ҡарау коллегияһы тупаҫ боҙҙо.

Бында Ожгихин, Зайцев, Минаев иптәштәр башҡорт телендә яҙылған кассацияны уҡынылармы һуң? тигән бик урынлы һорау тыуа. Юҡ, әлбиттә, улар уны уҡый ҙа алмайҙар. Ул ғына түгел, суд ултырышы протоколын уҡып анализ бирһәләр ҙә яңғыш булыр ине. Әгәр улар протоколды уҡыһалар, Бишбүләк районының 2-се участка халыҡ судының тәржемәсе индерергә тигән ҡарарын күреп, төп законды боҙған Адаевҡа сара күреү тураһында нимә лә булһа әйткән булырҙар ине. Ләкин енәйәт эштәрен ҡарау коллегияһы элеккесә эшләүен дауам итә. Үҙе үк Башҡорт АССР-ы Верховный Судының төп бүлеге булыуға ҡарамаҫтан, ул Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 78-се статьяһын боҙоуға юл ҡуя.

Йәки бына башҡорт милләтенән Шамыҡаеваның эше. Ғәйепләү эшен тикшереү тәржемәсе аша алып барыла. Ә Мишкә районының икенсе участка халыҡ суды (судья иптәш Микишин) эште тәржемәсенән башҡа ҡарай. Был эш буйынса Башҡорт АССР-ы Верховный судына бирелгән кассацияла иптәш Сайпушев етәкселегендә шулай уҡ рус телендә ҡарала.

Ғибайҙуллинаның ғәйепләү эше тураһындағы фактты килтерергә мөмкин. Эште тикшереү башҡорт телендә алып барыла һәм эш Илеш районының беренсе участка халыҡ судында башҡорт телендә ҡарала, хөкөм ҡарары ла башҡорт телендә яҙыла. 1951 йылдың 16 февралендә Верховный Судта эште ҡарағанда коллегия ултырышында БАССР Верховный Суды председателе иптәш Сайпушев үҙе етәкселек итә, суд члены иптәш Шәмсетдинов рус телендә докладывать итә. Эш рус телендә алып барыла һәм ҡарар русса яҙыла.

Республиканың Верховный Суды председателе Сайпушев һәм члены, партбюро секретаре Шәмсетдинов иптәштәр Сталинсе Конституцияның һәм Башҡорт АССР-ы Конституцияһындағы төп принциптарҙы тупаҫ боҙалар һәм шуның өсөн дә ҡайһы бер халыҡ судтары, тикшереү органдары работниктәре тарафынан да был принциптарҙың боҙолоуына юл ҡуялар. Был хәл шулай уҡ республика Юстиция министерствоһының да халыҡ судтары работниктәре өҫтөнән сиктән тыш йомшаҡ контроллек итеүе тураһында һөйләй.

Сталинсә Конституцияның 112 һәм Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 80-се статьяларына ярашлы рәүештә судьялар бойондороҡһоҙ булып торалар һәм тик законға ғына буйһоналар. Шуға күрә судьялар суд эштәрен башҡарғанда бары тик законға ғына таянып эш итергә тейештәр. Халыҡ судьялары бөтә суд эштәрен Сталинсә Конституциянан сығып хәл итергә бурыслылар. Совет законлығын үтәмәгән, уны боҙған кешеләр халыҡ интересына ҡаршы киләләр, Совет государствоһының, обществоһының интерестарына зыян килтерәләр. Был, енәйәт эшләү булып тора. Шуға күрә лә совет законлығын боҙоусыларға ҡаты саралар күрелә.

Совет законын аныҡ һәм тайпылышһыҙ үтәү һәр бер совет гражданларының бурысы. Башҡорт АССР-ы Верховный Суды членддәре, шул иҫәптән уның председателе Сайпушев, коллегия председателе Ожгихин, Верховный Суд члены (ул уҡ тауге партия ойошмаһы секретаре) Шәмсетдинов иптәштәр үҙҙәренең граждандыҡ бурыстарын үтәү йөҙөнән дә закон принциптарын боҙорға тейеш түгелдәр, икенсенән — судья булыуҙары яғынан да башҡа кешеләргә боҙорға юл ҡуймаҫҡа тейештәр.

Х. Йосопов.

Бухарестә И. В. Сталин исемендәге культура һәм ял паркын асыу

БУХАРЕСТ, 3 май. (ТАСС). ... Бухарестә И. В. Сталин исемендәге культура һәм ял паркын тантаналы асыу булып үтте.

Паркта төрлө атракциондар ... Асыҡ һауала 3500 тамашасыға иҫәпләнгән рырлыҡ театр яһалған.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — Украина ССР-ының атҡаҙанған артисе, Сталин премияһы лауреаты Азрикан ҡатнашлығында «БАТ...».

Рус драма театрында — «ЛУТОНИНДАР СЕМЬЯҺЫ».

«Октябрҙә» — «ТЫНЫС БӨЙӨ...»

«Салауатта» — «БЫЛ ... БУЛДЫ».

«Уралда» — «ТЫНЫС БӨЙӨ...»

Матросов исемендәге кинотеатрҙа ... «АЛТЫН АСҠЫС», ... ЙОРТ».

Өфө ҡалаһы Цюрупа урамының ... номерлы йортондағы 4-се квартирала торыусы гражданка **Голубкова** ... Андреевна гражданин **Александров** ... Иванович менән айырылышыу тураһында эш ҡуҙғата. Эш БАССР Верховный Судында ҡараласаҡ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80 49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90 22.

П02468 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25...

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШКОРТОСТАН

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

1951 йыл № 88 (8805)
6 МАЙ йәкшәмбе

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттары, Башкорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө Кала Советы органы.

хакы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

МӘКТӘПТӘРҘЕ ЯҢЫ УКЫУ ЙЫЛЫНА ӨЛГӨЛӨ ӘҘЕРЛӘЙЕК! Дүртөйлә районы колхозсыларының, эшселәренең, хеҙмәткәрҙәренең, халык мәғарифе работниктарының, партия, совет, профсоюз, комсомол һәм хужалык ойошмаларының мөрәжәғәте (1-се бит).

БАСЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ. Н. Нәҙерғәлин. — Сәғәт графигы менән эшләйбеҙ (1-се бит).

Х. Фәтхетуллин. — Алдынғылар сафында (1-се бит).

ЯҢЫ ЗАЕМҒА БЕР КӨНДӘЛӘН ЯҘЫЛЫП, СОВЕТ КЕШЕЛӘРЕ ТЫУҒАН ИЛЕБЕҘГӘ, ЛЕНИН — СТАЛИН ПАРТИЯҺЫНА ҮҘҘӘРЕНЕҢ КАЙНАР МӨХӘББӘТТӘРЕН БЕЛДЕРӘЛӘР. Агитаторҙарға ярҙамға. О. Сөләймәнов. — Бөтә халык заемы (2-се бит).

К. Нуриаев. — Бораулауҙың турбин ысулын бөтә бригадаларға! (2-се бит).

М. Бикбулатов. — Радиоприемник янында (3-сө бит).

Н. Анаторцев. — «Радио көнө» (3-сө бит).

Башкорт шағиры А. Игебаев шиғырҙары (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КЕҢӘШТӘРЕ. И. Стрелоченко. — [illegible] (4-се бит).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙары урынбаҫарҙарының әҙерлек кеңәшмәһе (4-се бит).

Кореялағы вакиғалар (4-се бит).

МӘКТӘПТӘРҘЕ ЯҢЫ УКЫУ ЙЫЛЫНА ӨЛГӨЛӨ ӘҘЕРЛӘЙЕК!

Дүртөйлә районы колхозсыларының, эшселәренең, хеҙмәткәрҙәренең, халык мәғарифе работниктарының, партия, совет, профсоюз, комсомол һәм хужалык ойошмаларының

Башкорт АССР-ының бөтә колхозсыларына, эшселәренә, хеҙмәткәрҙәренә, халык мәғарифе работниктарына, партия, совет, комсомол һәм профсоюз ойошмаларына, предприятиеләр һәм колхоздар етәкселәренә

МӨРӘЖӘҒӘТЕ

Кәҙерле иптәштәр!

Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте һәм лично иптәш Сталин совет балаларын тәрбиәләү тураһында, мәктәптәрҙең ихтыяждары тураһында, уларҙы үҫтереү һәм камиллаштырыу тураһында ҙур һәм өҙлөкһөҙ хәстәрлек күрәләр. Был хәстәрлек дөйөм мәжбүри ете йыллык белем биреүҙе тормошка ашырыуҙа, халык мәғарифе ихтыяждарына бик ҙур ассигнованиеләрҙә һәм үҫеп килеүсе йәш быуынды укытыуҙы һәм тәрбиәләүҙе бөтә саралар менән якшыртыуҙа үҙенең кәүҙәләнешен таба.

Совет мәктәбе укыусыларҙы тәрән һәм ныклы белем һәм уны практикала кулланa белеү менән коралландырырға саҡырылған, ул йәштәрҙә донъяға коммунистик караш һәм Ленин — Сталин партияһының бөйөк эшенә икһеҙ-сикһеҙ бирелгәнлек тәрбиәләй, яңы совет кешеһен — коммунизм өсөн арымай-талмай көрәшеүсене әҙерләй.

Балалар — беҙҙең киләсәгебеҙ. Беҙҙең илебеҙҙә мәктәп тураһында, үҫеп килеүсе йәш быуынды укытыу һәм тәрбиәләү тураһында хәстәрлек бөтә халык эше булып тора.

Беҙҙең балаларыбыҙ якшы укыһындар өсөн мәктәптәрҙә иң якшы шарттар булдырырға, уларҙы яңы укыу йылына үҙ вакытында әҙерләргә кәрәк. Улар якшы итеп ремонтланған булырға, яғыулык, класс мебелдәре, укыу әсбаптары, дәреслектәр һәм кәрәкле хужалык инвентарҙары менән тәьмин ителергә тейештәр. Мәктәптәр йылы, якты, таҙа һәм йыйнак булырға тейештәр. Дөйөм мәжбүри ете йыллык белем алыуҙы уңышлы рәүештә тормошка ашырыу һәм урта белем биреүҙе артабан киңәйтеү өсөн материаль база булдырырға кәрәк.

Был бурыстарҙы үтәргә ынтылып, беҙ Дүртөйлә районының колхозсылары, эшселәре, хеҙмәткәрҙәре, халык мәғарифе, партия, совет, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының работниктары, предприятиеләрҙең һәм колхоздарҙың етәкселәре үҙебеҙгә түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ:

1. 1951-52 укыу йылында мәктәп йәшендә булған бөтә балаларҙы дөйөм мәжбүри ете йыллык укыу менән солғап алырға, 8—10 кластарға һәм ауыл йәштәренең киске мәктәптәренә укыусылар кабул итеүҙә государство планының үтәлеүен тәьмин итергә.

2. Общественностең инициативаһы менән уның средстволарына 1951 йылдың 15 августына тиклем 2 ете йыллык һәм 3 башланғыс мәктәптәрҙең яңы биналарын төҙөргә, ошо ук вакытка 14 мәктәп бинаһына капиталь ремонтты тамамларға.

3. 15 июлгә тиклем мәктәп биналарына ағымдағы ремонтты тамамларға, бөтә урта мәктәптәр эргәһендәге мәктәп интернаттарын ремонтларға һәм йыһазландырырға.

4. Минеште, Түбән-Манчар, Өнгәсәк, Күк Күлн, Тарасовка, Мәмәҙәл ете йыллык мәктәптәре эргәһендә укыусылар өсөн общественный интернаттар ойоштторорға, ә калған мәктәптәрҙә укыусыларҙы квартираларға урынлаштырыу тураһында общественный хәстәрлек күрергә.

5. Үҙ-ара һалым средстволарына общественностең актив ярҙамында укыу йылы башланыуға тиклем укытыусыларға квартира өсөн 5 йорт төҙөргә.

6. Ошо йылдың 15 августына тиклем 4 балалар йортоноң биналарына ремонтты тамамларға, 1951-52 укыу йылының бөтә ягыу сезоны өсөн яғыулык әҙерләргә һәм ташып куйырға.

7. Ошо йылдың 15 майына тиклем мәктәптәр, балалар учреждениеләре һәм укытыусыларҙың квартиралары өсөн 7700 кубометр утын, 55 тонна торф, 150 тонна тиҙәк әҙерләргә һәм 15 июлгә бөтә яғыулыкты мәктәптәрҙең һәм балалар учреждениеләренең усадьбаларына ташып куйырға.

8. Ошо йылдың 1 августына бөтә мәктәптәрҙә лә барлык мәктәп мебелен һәм хужалык инвентарҙарын сифатлы итеп ремонтларға. Яңынан 100 дана парта, 50 класс таҡтаһы, 50 шкаф, 200 ултырғыс булдырырға.

9. Бөтә урта мәктәптәр эргәһендә физика, химия-биология кабинеттары, ә ете йыллык мәктәптәр эргәһендә йәнле тәбиғәт мөйөштәре булдырырға. Укыу, күргәҙмә әсбаптарҙы әҙерләүҙе һәм ремонтлауҙы укытыусылар һәм укыусылар көсө менән башкарыуҙы ойошторорға.

10. 1951 йылдың 1 сентябренә күргәҙмә пособиелар һәм библиотекалар өсөн китаптар алыуға бүленгән бюджет средстволарын тулыһынса файҙаланырға. Ошо ук срокка районға кәрәкле һанда дәреслектәр һәм мәктәп яҙыу карак-яраҡтарын килтерергә һәм уларҙы мәктәптәргә һатыуҙы ойошторорға.

11. Бөтә мәктәптәр эргәһендә лә спорт майҙандары йыһазландырырға, уларҙы спорт инвентарҙары менән тәьмин итергә.

12. Мәктәптәр эргәһендәге бөтә усадьбаларҙы тирәләп алырға, уларҙы йәшелләндерергә. Бөтә ете йыллык һәм урта мәктәптәрҙә мәктәп эргәһе участкалары булдырырға, укыу практикаһы һәм мичуринсе биологияның яңы казаныштарын пропагандалау өсөн емеш-сәк кыуаклыктары һәм емеш ағастары ултыртырға.

13. Йәйге осорҙа һауыктырыу саралары үткәрергә. Пионер лагерҙарында 250 баланы үткәрергә, укыусы балалар араһында массовый-спорт һәм туристик эште киң йәйелдерергә.

14. Ошо йылдың 15 майына тиклем бөтә мәктәптәрҙе укытыусылар кадрҙары менән комплектовать итергә, укытыусыларҙың әҙерлектәрен күтәреү буйынса курс сараларын һәм ситтән торол укыу буйынса сараларҙы тулыһынса үтәргә.

15. Ошо йылдың 20 августынан да һуңламайынса мәктәптәрҙең яңы укыу йылына әҙерлектәренә тикшереү һәм кабул итеүҙе үткәрергә.

16. Яңы укыу йылына әҙерлекте сифатлы итеп һәм районның эске ресурстарын файҙаланып, кыҫка сроктарҙа үткәрергә йөкләмә алып, беҙ, республиканың колхозсыларын, эшселәрен, хеҙмәткәрҙәрен, мәктәп работниктарын, партия, совет, хужалык һәм общественный ойошмаларын мәктәптәрҙе 1951-52 укыу йылына өлгөлө әҙерләү өсөн социалистик ярышка кушылырға саҡырабыҙ.

Мөрәжәғәт Дүртөйлә районы ауыл Советтарының сессияларында, колхоз партия, комсомол һәм профсоюз йыйылыштарында тикшерелде һәм кабул ителде.

Мәктәптәр эшендәге яуаплы осор

21 майҙа бөтә илебеҙҙең, шул иҫәптән, Башкортостандың мәктәптәрендә лә экзамендар башланасак.

Ағымдағы укыу йылы совет мәктәбенең артабан алға китеүен билдәләү йылы булды. Ауыл ерҙәрендә дүрт йыллык мәжбүри дөйөм укыуҙан ете йыллык белем алыуға күсеү һәм урта белем алыуҙы киңәйтеү ҙур әһәмиәтле вакиғалар булып тора. Ошо укыу йылында республикала яңы 104 ете йыллык мәктәп, 11 урта мәктәп, шулай ук күп кенә эшсе һәм крәҫтиән йәштәре мәктәптәре асылды. Беҙҙең мәктәптәребеҙҙә укыусыларҙың һаны алты йөҙ мең кешенән дә ашыуырак. Мәктәптәрҙә 2700-ҙән артык укытыусы эшләй.

Укытыу-тәрбиә эшенең сифаты тайпылышһыҙ күтәрелә. 1950-1951 укыу йылы совет мәктәбе тормошонда айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Иптәш Сталиндең тел ғилеме буйынса гениаль хеҙмәттәре беҙҙең мәктәптәребеҙ тарихында кырка боролош яһауҙы тәьмин иттеләр. Иптәш Сталиндең тел ғилеме тураһындағы күрһәтмәләре рус теле һәм әсә теле укытыусыларының эшендә нигеҙ итеп алынды, улар калған бөтә фәндәрҙе укытыусылар өсөн дә гүзәл етәксе материаль булып тора.

Укытыусыларҙың эштәрен якшыртыу өсөн бөтә саралар менән ярҙам күрһәтергә тырышып, етәксе педагогик һәм методик уҙәктәр ошо йыл эсендә бик күп һанда киммәтле методика һәм укыу пособиеларе сығарҙылар.

Башкорт АССР-ының алдынғы укытыусылары ошо хәстәрлеккә фиҙакәр хеҙмәт итеү менән яуап бирәләр. Күп кенә мәктәптәрҙең коллективтары укыу йылы азағына [illegible] килеләр. Мәсәлән, Өфө калаһының 14-се мәктәбе [illegible]

[illegible]

башка ете йыллык мәктәптәрҙә лә ошондай ук хәл, тип әйтерлек. РайОНО мөдире иптәш Сәлихов һәм унда эшләүсе башка работниктар мәктәптәрҙә булмайҙар, укытыу-тәрбиә эшенә канцелярисе-бюрократик метод менән етәкселек итәләр.

Иглин урта мәктәбе (директоры иптәш Шкурихин), Илеш районының Юғары Йәркәй һәм Иҫке Дөмәй мәктәптәре, Күмертау посёлкаһының эшсе-йәштәр мәктәбе эшендә лә күп етешһеҙлектәр бар.

Былдарҙың бөтәһе лә укытыусыларҙан һәм мәғариф органдарының етәксе работниктарынан экзамендар башланыуға тиклем калған көндәрҙә етешһеҙлектәрҙе төҙәтеү буйынса ныкышмалы эшләүҙе талап итәләр. Экзамендарға әҙерлек осоронда быға тиклем дәрестә артта калып килгән укыусылар менән эшләү айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. «Правда» газетаһы ошо йылдың 15 апрелендәге баш мәкәләһендә былай тип яҙҙы: «Экзамендарға әҙерләнеп, һәр бер мәктәп артта калыусылар менән эшләүҙе дөрөҫ ойошторорға тейеш. Ошоно танырға кәрәк, кайһы бер мәктәптәрҙә былдай укыусыларҙың һаны һаман күп әле, ә уларға етерлек тиклем ярҙамлашмайҙар. Укытыусы укыусының өлгәшеүе өсөн яуаплылык йөрәтә, һәм ул артта калыусы укыусыларға карата үҙенең яуаплы булыуын оноторға тейеш түгел».

«Правда»ның был күрһәтмәһе экзамендарға әҙерлек вакытында мәктәптәр эшендә етәксе күрһәтмә булып хеҙмәт итергә тейеш. Дәрестә артта калыусы укыусылар [illegible]

[illegible]

Һәм алдынғы мәктәптәрҙә былдай эш [illegible]

[illegible]

Экзамендар осоронда ... [illegible]

Шулай ук мәктәптәрҙә экзамендар [illegible] ... Мөрәжәғәт ВКП(б) Өлкә Комитеты тарафынан кушылды, һәм бик тиҙ ук, һәм ул бөтә республикала киң яклау табыр.

Башкорт АССР-ы Министрҙәр Советында һәм

ВКП(б) Өлкә Комитетында

Йылкысылык буйынса алдынғы районға Башкорт АССР-ы Министрҙәр Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Кыҙыл Байрағын биреү тураһында

1951 йылдың I кварталында республика колхоздарында йылкысылыкты үҫтереү һәм һаклап алып калыу буйынса районлараның социалистик ярышы йомғактарын карап сыккандан һуң Башкорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы карар сығарҙы:

1951 йылдың I кварталында йылкысылыкты үҫтереү һәм һаклап алып калыу буйынса районларҙың социалистик ярышында йылкысылыкты һаклап алып калыу, үҫтереү һәм аттарҙы яҙғы баҫыу эштәренә әҙерләү буйынса якшы күрһәткестәргә өлгәшкән Миәкә районын (район Советы исполкомы председателе иптәш Нафиков, ВКП(б)-ның район комитеты секретаре иптәш Григорьев, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Дәүләтшин, баш зоотехник иптәш Мөхәмәтъянов, баш ветврач иптәш Александров, йылкысылык буйынса зоотехник иптәш Кәримов) еңеүсе тип танырға.

Башкорт АССР-ы Министрҙәр Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Кыҙыл Байрағын Хәйбулла районынан алып, Миәкә районына тапшырырға һәм 6000 һум күләмендә аҡсалата премия бирергә.

Федоровка, Бишбүләк һәм Ауырғазы районларының йылкысылыкты үҫтереү буйынса якшы эшләүҙәрен билдәләп үтергә.

Өфөлә большевистик матбуғат көнөнә арналған тантаналы йыйылыш

Өфө, 5 майҙа Луначарский исемендәге башкорт дәүләт театры бинаһында Өфө калаһы матбуғат работниктарының, партия, совет, профсоюз ойошмалары вәкилдәренең катнашлығында, большевистик матбуғат көнөнә арналған йыйылыш булды.

Йыйылышта «Кыҙыл Башкортостан» газетаһының редакторы иптәш Ғ. Ғафаров большевистик матбуғат тураһында доклад яһаны.

Йыйылыш иптәш Сталинға хат кабул итте.

Башгосфилармония артистарының көсө менән ҙур концерт куйылды.

ВКП(б) ӨЛКӘ КОМИТЕТЫНДА

Дүртөйлә районы хеҙмәтсәндәренең мөрәжәғәте тураһында

Дүртөйлә районы хеҙмәтсәндәренең мөрәжәғәтен тикшереп, ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы **карар итә:**

1. Яңы 1951-52 укыу йылына мәктәптәрҙе һәм балалар йорттарын өлгөлө әҙерләү өсөн республика районлары һәм калалары араһында социалистик ярыш ойошторорға саҡырыу менән Башкорт АССР-ының бөтә хеҙмәтсәндәренә мөрәжәғәт иткән Дүртөйлә районы хеҙмәтсәндәренең инициативаһын хупларға һәм якларға.

2. ВКП(б)-ның район һәм кала комитеттарын һәм район кала Советтары исполкомдарын Дүртөйлә районы хеҙмәтсәндәренең мөрәжәғәтен эшселәрҙең, хеҙмәткәрҙәрҙең, колхозсыларҙың, халык мәғарифе работниктарының һәм мәктәптәр өҫтөнән шефлык итеүсе ойошмалар коллективтарының йыйылыштарында айырырға һәм район, кала хеҙмәтсәндәренең мәктәптәрҙе һәм балалар йорттарын яңы укыу йылына өлгөлө әҙерләү өсөн социалистик ярышын ойошторорға мәжбүр итергә.

3. Ошо йылдың 10 июненән алып 10 июленә тиклем мәктәптәргә яңы укыу йылына әҙерлектә ярҙам буйынса республика айлығы үткәрергә.

4. Мәктәптәрҙе яңы укыу йылына якшы әҙерләгән өсөн социалистик ярышта беренсе урынды алған район һәм кала өсөн күсмә Кыҙыл Байраҡтар булдырырға.

Художниктар Б. Березовский менән Б. Мухин эшләгән һәм Госфиниздат тарафынан сығарылған плакат.

(ТАСС фотохроникаһы).

Баҫыу эштәре көндәлеге

СӘҒӘТ ГРАФИГЫ МЕНӘН ЭШЛӘЙБЕҘ

«Авангард» колхозын хеҙмәтләндереүсе трактор бригадаһында сәғәт графигы менән эшләүҙе беренсе булып трактористар Айбатов, Сәнтүәлин иптәштәр башлап ебәрҙеләр.

Былын өсөн беҙ алдан бик ентекләп трактор агрегаттарын баҫыу эштәренә әҙерләнек. Бригаданы хеҙмәтләндереү өсөн етерлек һанда колхозсылар беркетелде.

Эш иртәнге сәғәт алтыла башланып китте. Трактористар беренсе әйләнештә үк ярышып эшләй башланылар. Был ярыш вакытка экономия яһауға, тракторҙарҙың хеҙмәт етештереүсәнлектәрен күтәреүгә ярҙам итте. Тәүге дүрт әйләнештә Сәнтүәлин үҙ агрегаты менән һәр бер әйләнешкә дүртәр минут вакытка, Айбатов 5 минутка экономия яһанылар.

Тәүҙә сәскестәргә орлок һалыуҙа 3-4 минут вакыт юғалтыла ине. Баҫыусылык бригадаһының бригадиры иптәш Ғәбетдинов сәскестәргә өҫтәмә кешеләр бүлде һәм шул арҡала простойҙар бөтөрөлдө. Айбатов менән Сәнтүәлин эшләп алғансы тракторҙы башкалар йөрөтөп торҙолар.

Төшкө ашка тиклем һәр ике агрегат та берәр норма үтәүгә өлгөрҙөләр. Сәнтүәлин үҙ агрегаты менән смена нормаһын 5 сәғәт 55 минутта 101,5 процентка үтәне. Айбатов 6 сәғәт 48 минутта 100 процентка үтәне.

Төштән һуң икенсе норма үтәү өсөн көрәш башланып китте. Эш көндөң икенсе яртыһында ла шулай ук күтәренке темп менән, ойошкан рәүештә алып барылды.

Кис, был ике агрегаттың эш һөҙөмтәһе бөтә бригада алдында тикшерелде. Тракторист Айбатов үҙ агрегаты менән 10 сәғәт 6 минутта смена нормаһын 155 процентка үтәне. Һәр бер сәғәттең хеҙмәт етештереүсәнлеге план буйынса каралғанса 1,8 гектар урынына 2,02 гектар тәшкил итә. Агрегат 31 килограмм яғыулыкка экономия яһаны.

Тракторист Сәнтүәлин агрегаты 11 сәғәт 5 минутта смена нормаһын 189 процентка үтәне. Тракторҙың эш сәғәтенә үтәлеше график буйынса каралғанса 1,55 гектар урынына 2,4 гектар тәшкил итә. Был агрегат сменаға 50 килограмм яғыулыкка экономия яһаны.

Тәүге көндөң гүзәл күрһәткестәре бөтә бригадаларҙы сәғәт графигы менән эшләүгә рухландырҙы.

Н. Нәҙерғәлин,
Учалы МТС-ының «Авангард» колхозын хеҙмәтләндереүсе трактор бригадаһы бригадиры.

АЛДЫНҒЫЛАР САФЫНДА

Иглин районы «Родина» ауыл хужалығы артеле члендәре быйыл иртә культуралар сәсеүҙе юғары агротехник кимәлдә, 1 Майға тамамларға социалистик йөкләмә алғайнылар. Был йөкләмә намыҫ менән үтәлде. 611 гектар майҙанда колхоздың орлокселек участкаларында етештерелгән орлоктар ғына сәселде. Бойҙай сәсеүлегенең 100 гектары аркыры-буй сәсеү ысулы менән башкарылды. Былардан тыш, быйыл бакса майҙаны 10 гектарға киңәйтелде. Шулай ук баҫыу һаклаусы урман полосаһы ултыртыу планы ла үтәлде.

Сәсеү юғары агротехник кимәлдә үткәрелде. Агроном иптәш Мирсәит Ғәлимов орлоктарҙы сылатып һәм коро юл менән ағыулау, яңы сәсеү ысулдарын һәм нормаларын куллаңыу һәм башка эштәргә етәкселек итте. Колхоз председателе Фәтхулла Хәбибов, колхоз партия ойошмаһы секретаре Фатима Ваһапова, комсомол ойошмаһы секретаре Зәйнәп Хәкимова иптәштәр сәсеү эштәрен ойоштороуҙа бөтә сараларҙы күрҙеләр.

Яҙғы баҫыу эштәрен алып барыу менән бер үк вакытта, колхозда 2 быуа быуылды.

Иглин район Советы исполкомы һәм ВКП(б) райкомы район колхоздарының яҙғы сәсеү буйынса социалистик ярышының барышын тикшереп һәм ярышта алдынғы булып танылған «Родина» колхозы район почет тактаһына индерелде һәм уға районның күсмә Кыҙыл Байрағы бирелде.

Х. Фәтхетуллин.

Сәсеү иң якшы агротехник сроктарҙа үткәрелде

Матрай. (Телефон аша). Молотов исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре яҙғы баҫыу эштәрен ҙур ойошканлык менән үткәрәләр. Колхоз 2445 гектар майҙанда иртә культуралар сәсеүҙе иң якшы агротехник сроктарҙа үткәрҙе.

Һары Күл МТС-ының иптәш Попов етәкселек иткән трактор бригадаһы колхоз менән төҙөшкән договорҙы намыҫ менән үтәй. Бригада яҙғы баҫыу эштәре планын 7 эш көнөндә үтәп сыкты. Тракторҙар менән 1100 гектар майҙанда ашлык сәселде.

С. Хәкимов.

Яңы заемға бер көнөлдән яҙылып, совет кешеләре Тыуған илебеҙгә, Ленин—Сталин партияһына үҙҙәренең ҡайнар мөхәббәттәрен белдерәләр

АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА

Бөтә халыҡ заемы

1951 йылдың 3 майында СССР Министрҙар Советы бик мөһим документ — халыҡ хужалығын үҫтереү заемын сығарыу турһында ҡарар ҡабул итте.

Совет хөкүмәте тарафынан сығарылған государство заемдары илебеҙҙең экономик һәм политик тормошонда ҙур роль уйнайҙар. Беҙҙең бюджетебеҙҙә заемдарға яҙылыуҙан инген средстволар Совет хөкүмәтенә хужалыҡ һәм культура төҙөлешен йәйелдерергә, Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен нығытырға ярҙам итәләр. Иптәш Сталин 1926 йылда, беҙҙең илебеҙ социалистик реконструкцияла юлына инген генә ваҡытта уҡ әле, государство заемдарының әһәмиәтен бик ҙур асыҡлыҡ менән әйтеп бирҙе. «...Эске заемдарҙы ойоштороу эше бурысы, — тине иптәш Сталин, — беҙҙең алдыбыҙҙа һис шикһеҙ наубәттәге бурыс булып тора һәм беҙ уны нисек кенә булһа ла хәл итергә тейешбеҙ». Иптәш Сталин тарафынан совет халҡы алдына ҡуйылған был бурыс уңышлы рәүештә үтәлде.

Совет государство заемдарының системаһы Совет государствоһы тарафынан общественны социалистик үҙгәртеп ҡороу өсөн яңы социалистик экономика нигеҙендә яҡынан төҙөлдө.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы еңгәндән һуң уҡ Совет хөкүмәте батша Российаһының һәм ваҡытлы хөкүмәттең 1917 йылда 60 миллиард һумға тиклем еткән эске һәм тышҡы заемдарын юҡҡа сығарҙы.

Шуның менән илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре сит илдәргә миллиардлаған һум аҡса түләүҙән ҡотҡарылдылар. Империалистик һуғыштарҙы алып барыу һәм Российалағы полиция-бюрократик режимын тотоу маҡсаттарына хеҙмәт иткән батша һәм ваҡытлы хөкүмәттәрҙең кабальный заемдарын юҡҡа сығарып, Совет хөкүмәте яңы социалистик кредит системаһын булдырҙы. Граждандар һуғышы һәм сит ил интервенцияһы тарафынан емерелгән халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу эшенә халыҡтың ирекле средстволарын йәлеп итеү маҡсатында, беҙҙең государствобыҙ 1922 йылда беренсе халыҡ заемын сығарҙы. Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу йылдарында сығарылған заемдар беҙҙең экономикабыҙҙы нығытыу эшендә ҙур роль уйнанылар. Улар бюджет дефицитен бөтөрөүгә, әйләнештә булған артыҡ аҡсаларҙы юҡ итеүгә ярҙам иттеләр, 1922—1924 йылдарҙағы аҡса реформаһын әҙерләү һәм тамамлау эшендә ҙур әһәмиәткә эйә булып торҙолар.

Шулай итеп, совет заемдары үҙҙәренең тәбиғәте буйынса халыҡ заемы характерын алып торалар. Уларҙың маҡсаты халыҡ хужалығын үҫтереү һәм нығытыу интересторына, хеҙмәтсәндәрҙең етеш көн-күрешен яҡшыртыуға, СССР халыҡтарының культураһын һәм искусствоһын сәскә аттырыуға хеҙмәт итеүҙән ғибарәт. Шуға күрә беҙҙең заемдарыбыҙ баштан уҡ ғәйәт ҙур популярлыҡ алдылар.

Бөтә эске ресурстарҙы мобилизациялауҙы талап иткән илде индустриялаштырыу йылдарында заемдар ғәҙәттән тыш мөһим роль уйнанылар. Иптәш Сталин ауыр индустрияны илдең үҙ ресурстары иҫәбенә төҙөүҙең ғәйәт ҙур тарихи тәжрибәһенән әһәмиәтен билдәләп, былай тип яҙҙы: «...СССР-ҙы асыҡтан-асыҡ һәм йәшерен рәүештә финанс блокадаһына алыуға ҡарамаҫтан, беҙ капиталистәр кабалаһына бармайынса һәм үҙ көстәребеҙ менән накопление проблемаһын уңышлы рәүештә хәл иттек, ауыр индустрияның нигеҙҙәрен һалдыҡ».

Илде социалистик индустриялаштырыу һәм ауыл хужалығын коллективлаштырыу өсөн средстволар туплау бурысын хәл итеүҙә совет заемдарының әһәмиәте бик ҙур булды. Улар партиябыҙға һәм хөкүмәтебеҙгә илебеҙҙе артта ҡалған аграр илдән ҡеүәтле индустриаль-колхоз державаһына әүерелдереүгә ярҙам иттеләр.

Илебеҙ үҫешенең бөтә осоро эсендә государство заемдарының роле һәм әһәмиәте йылдан-йылға үҫә бара. Шуның менән бергә, улар торған һайын киң ҡолас алалар һәм масса араһында киң тарала баралар. Әгәр ҙә беренсе сталинсе биш йыллыҡ ваҡытында бюджетҡа государство заемдарына яҙылыуҙан инген керемдәр 5,9 миллиард һум тәшкил итһә, икенсе сталинсе биш йыллыҡ йылдарында 19 миллиард һумға етте, ә өсөнсө биш йыллыҡтың 3,5 йылы эсендә генә лә 24,9 миллиард һум тәшкил итте. Шулай итеп, һуғышҡа тиклемге сталинсе өс биш йыллыҡ эсендә генә лә халыҡ заемдары иҫәбенән инген средстволар 50 миллиард һум самаһы булды. Улар ауыр индустрияны төҙөү, социалистик ауыл хужалығын нығытыу, культура революцияһын яһау һәм илебеҙҙе актив оборонаға әҙерләү өсөн файҙаланылдылар.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында заемдарҙан инген средстволар 76 миллиард һумдан артыҡ— һуғышҡа тиклемге бөтә өс биш йыллыҡ эсендә инген средстволарҙан 1,5 тапҡырға күберәк булды. Миллионлаған совет кешеләре хәрби заемдарға берҙәм яҙылып, Совет Армияһына фашистик Германияны һәм империалистик Японияны тар-мар итеү эшендә бөтә яҡлап ярҙам күрһәттеләр.

Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереү буйынса һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды үтәү һәм арттырып үтәү эшендә государство заемдары ғәйәт ҙур роль уйнанылар. Һуғыштан һуңғы осорҙа государство заемдарынан бюджет керемдәре 130 миллиард һум самаһы тәшкил итте.

Совет халҡының фидакәр хеҙмәте һөҙөмтәһендә Тыуған илебеҙ 1950 йыл аҙағына бөйөк уңыштарға өлгәште. Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең биш йыллыҡ планы промышленноста 4 йылда һәм 3 айҙа үтәлде. 1950 йылда промышленность продукцияһының күләме 1940 йыл кимәлен 73 процентҡа, шулай уҡ 1950 йылға план заданиеһен 11,7 процентҡа уҙып китте. 1946—1950 йылдар эсендә 6 меңдән артыҡ эре промышленность предприятиеләре аяҡҡа баҫтырылды, яңынан төҙөлдө һәм хәрәкәткә индерелде. Ауыл хужалығында бөртөклө ашлыктың валовой урожайы 1950 йылда 1940 йыл кимәлен 345 миллион ботҡа уҙып китте. Биш йыл эсендә бөртөклө ашлыҡ культураларының майҙаны 20 проценттан күберәккә арттьı. Бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайлығы һәм колхоздарҙың общественный малдарының һаны үҫтереү буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе арттырып үтәлде.

СССР халыҡ хужалығының даими үҫеүе нигеҙендә милли доход арта, хеҙмәтсәндәрҙең етеш көн-күреше күтәрелә. 1950 йылда, илебеҙҙең милли доходы 1940 йылға сағыштырғанда, 64 процентҡа артты. Киң ҡулланыу тауарҙарына хаҡтарҙы дүрт тапҡыр арзанайтыу һөҙөмтәһендә илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре 300 миллиард һумдан күберәк отош алдылар. Эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең, шулай уҡ крәҫтиәндәрҙең доходтарының дөйөм суммаһы, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 1950 йылда 62 процентҡа артты. Халыҡтың материаль хәленең яҡшырыуы менән бер үк ваҡытта, һуғыштан һуңғы осорҙа СССР халыҡтарының культураһын, фәнен һәм искусствоһын артабан үҫтереүҙә ғәйәт ҙур уңыштарға өлгәшелде.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды үтәп һәм арттырып үтәп, илебеҙ 1950 йыл аҙағында коммунизмдың гигант ҡоролмаларын — Волгала һәм Днепрҙа гидроэлектростанцияларҙы, Төп Төркмәнстан, Волга-Дон, Төньяҡ Ҡрым, Көньяҡ Украина каналдарын төҙөргә башланы.

Шулай итеп, Государство бюджетенә заемдарға яҙылыуҙан инген средстволар социалистик производствоны бөтә яҡлап киңәйтеүгә, СССР-ҙың экономик ҡеүәтен нығытыу һәм илдең общественный байлығын арттырыу эшенә йүнәлтеләләр. Тимәк, Совет государство заемдары етештереүсән характерҙәләр. Беҙҙең заемдарыбыҙҙың мөһим үҙенсәлеге, капиталистик илдәрҙең заемдарына сағыштырғанда, уларҙың принципиаль айырмаһы һәм өҫтөнлөгө бына шунда.

Капиталистик илдәрҙә заемдар капитализмдың дөйөм кризисе эпохаһында хроник характер алған государство бюджеттәренең ғәйәт ҙур дефицитен ҡаплау өсөн сығарыла. Буржуаз хөкүмәттәр заемдарҙы ҡоралланыуҙы арттырыу, империалистик һуғыштарҙы әҙерләү һәм алып барыу, полиция-бюрократик государство аппаратын тотоу өсөн, хеҙмәтсәндәрҙе иҙеү, уларҙың азатлыҡ хәрәкәтен баҫтырыу маҡсаттарында файҙаланалар.

Капиталистик илдәрҙә заемдар етештереүсән характерҙа булмайҙар. Сөнки уларҙы хакимлек итеүсе синыфтар паразитлек маҡсаттарында файҙаланалар, улар государство бурыстарын түләү сығанаҡтары булып хеҙмәт итмәйҙәр. Был заемдарға проценттар түләүҙең берҙән-бер сығанағы булып налогтар тора, уларҙы бөтәһенән дә элек хеҙмәтсәндәр түләй. Капиталистик обществола государство заемы — халыҡ өсөн ауыр йөк, хеҙмәтсәндәрҙе өҫтәмә эксплуатациялау ҡоралы ул.

Капиталистик государстволар тарафынан сығарылған заемдар государство бурыстарын йылдан-йылға арттырыуға килтерәләр. Экономикаһы ғәҙәттән тыш агрессия характерҙа булған төп капиталистик ил — АҠШ-та государство бурыстары һуңғы 20 йыл эсендә генә 15 тапҡырға үҫте һәм 1951 йылда 265 миллиард долларға етә. Был 1951 — 1952 йылға АҠШ-тың бөтә бюджетенән ике тапҡыр самаһына артыҡ. Государство бурыстарын ҡаплау өсөн Трумэндең агрессив хөкүмәте яңынан-яңы налогтар билдәләй, быйыл уларҙың күләме 80 миллиард долларға тиклем етә. Тимәк һәр бер семьяға уртаса йылына 2 мең доллар тәшкил итә. Башҡа капиталистик илдәр турһында ла шуны уҡ әйтергә кәрәк.

Шулай итеп, капиталистик илдәрҙә ғәсүдәр халыҡҡа ҡаршы характерҙәләр, империалистик хөкүмәттәрҙең агрессив политикаларын үткәреү ҡоралы булып хеҙмәт итәләр.

Социалистик государство заемының маҡсаты һәм бурыстары һәр кемгә аңлайышлы һәм асыҡ. Заем облигацияларын алған һәр бер совет кешеһе бының менән үҙ Тыуған иленең ҡеүәтен нығытыуға, шуның менән үҙенең дә етеш көн-күрешен күтәреүгә ярҙам итеүен аңлай. Шуға күрә Совет илендә государство заемдары ғәйәт ҙур ышаныс һәм популярлыҡ менән файҙаланалар.

Совет хөкүмәте, заемдарҙы сығарып, хеҙмәтсәндәрҙең дөйөм государство интерестарен уларҙың личный интерестәре менән бик яҡшы яраштыра. Облигация тотоусылар һәр йыл һайын государство заемдарҙа отоштарынан ғәйәт ҙур доход алалар. Хәҙерге ваҡытта Совет хөкүмәте тарафынан 20 йыл срокҡа сығарылған заемдарҙың һәр йыл һайын 4 проценте уйнала. 20 йыл эсендә облигацияларҙың бөтәһе 35 проценто ота. Облигация тотоусыларға уларҙың 65 процентенең срок үткәндән һуң хаҡы түләнә. Был срок эсендә Совет государствоһы заемға яҙылыусыларға, түләнгән отоштарҙы иҫәпкә алып, бер ярым тапҡырға күберәк сумма ла аҡса түләй.

Совет государство заемдары сығарыла башлағандан бирле илебеҙҙең хеҙмәтсәндәренә заем отоштары ғына 27,5 миллиард һум суммаһында түләнгән. 1949 — 1950 йылдарҙа ғына илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре отоштарҙан 6 миллиард һум өҫтәмә доход алдылар. Ә 1951 йылда совет халҡы 5 миллиард һум отасаҡ. 1950 йылда Башҡортостан хеҙмәтсәндәре 34.568 мең һум оттолар.

Государство заемдарына яҙылыу буйынса һәр йыл һайын үткәрелә торған кампания беҙҙең илдә юғары идея-политик кимәлдә, хеҙмәтсәндәрҙең ғәйәт ҙур патриотик күтәренкелеге обстановкаһында үтә. Һәр бер хеҙмәтсән социалистик Тыуған иленең сәскә атыуы хаҡына үҙенең ирекле средстволарын государствоға ҙур энтузиазм менән бурысҡа биреп тора.

СССР-ҙа заемдар—бөтә халыҡ эше ул. Совет заемдарына яҙылыу беҙҙә хеҙмәтсәндәрҙең политик һәм хеҙмәт күтәренкелегенең, совет халҡының мораль-политик берҙәмлегенең һәм коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте тирәһенә, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин тирәһенә туплаңғанлығының ысын демонстрацияһы булып тора.

Халыҡ хужалығын үҫтереү заемдарына берҙәм яҙылыу менән беҙ Тыуған илебеҙҙең көсөн һәм ҡеүәтен нығытабыҙ, тормошобоҙҙо байыраҡ һәм шатлыҡлыраҡ итәбеҙ, коммунизм юлынан алға хәрәкәтебеҙҙе тиҙләтәбеҙ.

О. Сөләймәнов,

Өфө нефть институтының марксизм-ленинизм кафедраһы преподавателе.

Өфө ҡалаһының предприятиеләрендә һәм учреждениеләрендә яңы заемға яҙылыу ҙур күтәренкелек менән бара.

Һүрәттә: 16-сы партсъезд исемендәге артелдә мотористка иптәш А. Степанова заемға яҙыла, ул государствоға ике айлыҡ хеҙмәт хаҡын үтесә бирҙе.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Бөйөк төҙөлөштәргә

Стәрлетамаҡ. (Телефон аша). Ҡала хеҙмәтсәндәре араһында яңы заемды урынлаштырыу ойошҡан рәүештә бара. Горместпромкомбинат, тегеү фабрикаһы һәм башҡа ҡайһы бер предприятиеләрҙең коллективтары заемға тәүге сәғәттәрҙә үк тулыһынса *яҙылып* бөттөләр. «Красный пролетарий» заводында, тимер юл бүлексәһендә, горторгта подписка айырыуса уңышлы үтте. Горторг коллективы [illegible] дарствоға үтесә айлыҡ хеҙмәт хаҡы [illegible] дынан байтаҡ арттырып бирҙе.

Ҡала хеҙмәтсәндәре государствоға [illegible] кә ун өс миллион һумдан күберәк [illegible] ство бирҙеләр. Ҡалала заемға [illegible] ҙауам итә.

Ә. Шест[illegible]

Заемға яҙылыу уңышлы бара

Баймаҡ. (Телефон аша). Районда яңы заемға яҙылыу ҙур күтәренкелек менән бара. Ауылдарҙа, МТС һәм колхоздарҙа булған митингыларҙа хеҙмәтсәндәр яңы заемға яҙылыу менән үҙҙәренең большевиктар партияһына, Совет хөкүмәтенә, бөйөк Сталинға бирелгәнлектәрен белдерәләр.

Карл Маркс исемендәге колхоз члены иптәш Уҙәнбаев *митингыла сығыш яһап,* былай тине:

— Тыуған илебеҙҙе тағы ла ҡеүәтлерәк итеү өсөн беҙҙең халҡыбыҙ бөтә көсөн һәм средствоһын ҡыҙғанмаясаҡ. Мин үҙемдең һаҡлығымдан 500 һумға яҙылып, хәҙер үк аҡсалата индерем [illegible] ҡалған иптәштәрҙе лә шуға саҡыра[illegible]

Шул уҡ колхоздың члендары [illegible] Социалистик Хеҙмәт Геройы [illegible] башҡа иптәштәр 500-әр һумға [illegible] подписка суммаһын тулыһынса [illegible] индерҙеләр.

Райондың башҡа колхоздарын[illegible] заемға яҙылыу ҙур активлек менә[illegible]

Район буйынса 4 майға 3 [illegible] 730 мең һумлыҡ заем урынлаш[illegible] лып, уның 420 мең һумы аҡсала[illegible] дерелде. Заемға яҙылыу уңышлы [illegible] итә.

В. Макси[illegible]

Беҙҙең вкладыбыҙ

Радио беҙгә, республикабыҙҙың иң алыҫ райондарынан береһе булған Зианчура районына, шатлыҡлы хәбәр килтерҙе. Яңы заемды сығарыу турһында хөкүмәт ҡарары тапшырылған ваҡытта беҙҙең Күгәрсен ете йыллыҡ мәктәбенең уҡытыусылар коллективы радиоприемник эргәһенә йыйналғайны. Уҡытыусылар ҡарарҙы ҙур күтәренкелек менән тыңлашылар һәм шунда уҡ үҙҙәренең тойғолары менән уртаҡлаштылар.

— Мин СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы заемы сығарылыуын, — тине РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы иптәш Нәби Кәримов, — ысын күңелемдән хуплайым. Сөнки хөкүмәтебеҙҙең был сараһы беҙҙең тормошобоҙҙо артабан яҡшыртыуға йүнәлтелгән. Совет власы, коммунистар партияһы миңә, ябай крәҫтиән балаһын элекке ваҡытта уйға ла килтерергә мөмкин булмаған *юғарылыҡҡа* күтәрҙе. Уҡытыусылыҡ хеҙмәтем өсөн Почётлы исем бирелде. Иң юғары награда— Ленин ордены менән наградланым [illegible] ҙең илебеҙҙә уҡытыусылар Совет [illegible] тенеп, бөйөк Сталиндең атайҙары[illegible] хәстәрлеге менән солғап алынған [illegible]

Унан һуң уҡытыусы иптәш [illegible] тов:

— Беҙҙең заемға биргән аҡса[illegible] быҙ, — тине ул, — коммунизм [illegible] төҙөлөштәренә китәсәк. Заемға [illegible] аҡсаларыбыҙ — ул яңы һуғыш [illegible] тоҡанлырырға маташыусы [illegible] тәргә ҡаты удар булып торасаҡ [illegible] СССР халыҡ хужалығын үҫтереү [illegible] бер мең һумға яҙылып, 700 һум [illegible] ҙер үк индерәм.

Яңы заемға яҙылыу ҙур күтәр[illegible] менән үтте һәм 10 мең һумдан [illegible] раҡ сумма шунда уҡ аҡсалата [illegible] де.

Ф. [illegible]

Зианчура районы, Күгәрсен [illegible] йыллыҡ мәктәбе директоры.

Бораулауҙың турбин ысулын— бөтә бригадаларға!

1947 йыл бораулауҙа турбин ысулын ҡуллана башлау йылы булды. Тәүҙә күп кенә мастерҙар был ысулдың өҫтөнлөгөнә ышанмаһалар һәм, форсированный режимда ротор ысулы менән бораулап, роторҙың әйләнеш тиҙлеген күтәреү иҫәбенән проходка тиҙлеген арттырырға тырыштылар. Ләкин турбин ысулының ротор ысулынан өҫтөнлөгө бәхәсһеҙ. 1947 йылдың аҙағында Туймазы мастерҙары турбин ысулын ҡулланғанда юғары күрһәткестәргә өлгәшеү мөмкинлегенә бөтөнләй ышандылар.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың әҙәмлә дүрт йылы бораулау техникаһына бик күп үҙгәрештәр индерҙе. Яңы турбин ысулы менән бораулай башлағас, бораулау тиҙлеге үҫте, хеҙмәтте ойоштороу яҡшырҙы, сырье һәм металдарҙа экономия яһарға мөмкинлек артты. Проходка тиҙлеген арттырыу өсөн хәрәкәтте Туймазы бораулаусылары ике юнәлештә башланылар. Уларҙың беренсеһе — роторға индивидуаль привод установкалары ҡуйып, ротор ысулы менән бораулау режимын камиллаштырыу һәм тиҙләтә барыу юнәлешендә булһа, икенсеһе уларҙың — 1947 йылдан бирле — турбин ысулын үҙләштереү һәм индереү юнәлешендә барҙы.

1947 йыл бораулау тиҙлеген арттырыуҙың киҫкен борылыш йылы булды. Бораулау мастеры иптәш П. Балабанов бригадаһы Туймазыла беренсе тапҡыр станок-айға 500 метр проходка тиҙлегенә өлгәште, ә Ишимбайҙа шул уҡ йылда мастер иптәш П. Куприянов етәкселек иткән бригада уны 500 метрҙан да арттырҙы.

1948 йылда күп бораулаусылар проходка тиҙлеген арттырыу өсөн яңы юлдар эҙерләнеләр. Турбин ысулы менән форсированный режимде үҙләштереүҙең һәм производствоға индереүҙең был башланғысы ғына ине әле. Мастер иптәш П. Куприяновтың бригадаһы 609 номерле буровойҙа станок-айға 688 метр тиҙлеккә, иптәш П. Балабанов бригадаһы 610 номерле буровойҙа — 726, иптәш Усов бригадаһы 223 номерле буровойҙа станок-айға 760 метр проходка тиҙлегенә өлгәште. Ә 1949—1950 йылдар турбин ысулы менән производствоға форсированный режимде киң рәүештә индереү осоро булды. Техник анализдар һуңғы өс йылда ротор ысулы менән бораулағанда, механик һәм коммерческий тиҙлектең үҫмәйенсә, элекке кимәлдә тороуын күрһәттеләр. Турбин ысулы менән бораулағанда тиҙлек әленән-әле үҫә барҙы. Алдынғы бригадалар проходка тиҙлеген станок-айға 1000—1150 метрға еткерҙеләр. Бораулау конторалары коллективтарының төп бурыстары булып өлгәшелгән был тиҙлекте массовый итеү, тиҙләтелгән метод менән бораулаусыларҙың һанын үҫтереү торҙо.

Бораулау режимының уңышын тикшереү өсөн буровойҙарҙа экспериментал эштәр башҡарылды. Улар бораулауҙа оптималь режимдә билдәләргә мөмкинлек бирҙеләр. Форсированный режимдә ҡулланыу тәжрибәһе шулай уҡ был ике режимда лә долотоларҙың расходын, форсированный режимдең уңышлы һәм файҙалы яҡтарын асыҡ күрһәтте. Скважинаны бораулау өсөн расходланған бөтә долотоларҙың үҙенә төшөү хаҡы ҙур ғына суммә тәшкил итә. Шуның өсөн дә һәр бер долото менән үтелгән проходка бик серьез мәсьәлә булып тора. Бер долото менән бик ҙур механик тиҙлектә аҙ ғына интервалды бораулағанда ла долотолар бик күп талап ителә, күтәреү-төшөрөү операцияларын йыш башҡарырға тура килә. Был, үҙенән-үҙә асыҡ, бораулауҙың коммерческий тиҙлеген кәметә.

Үткән йылда форсированный режимда ҡулланғанда, бер долото менән проходка биреү, нормаль режимға ҡарағанда, 1,5 метрға артыҡ булды. Шулай итеп, бораулауҙа форсированный режимда ҡулланыу долотоларҙы расходлауҙы уртаса 8 процентҡа тиклем ҡыҫҡартыуға мөмкинлек бирә. 1950 йылда беренсе контора буйынса скважиналар форсированный режимда 755 метр тиҙлектә борауландылар, ә икенсе конторала тиҙлек 642 метр тәшкил итте. Шулай итеп, форсированный режим тиҙлеге трест буйынса станок-айға 720 метр тәшкил итте, ә скважиналарҙы нормаль режимда бораулау тиҙлеге ни бары станок-айға 417 метр ғына булды. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, форсированный режимда бораулау тиҙлеге, нормаль режимдағыға ҡарағанда, 1,72 тапҡыр артыҡ.

Юғарыла әйтелгән күрһәткестәрҙән бораулау тиҙлеге буйынса был ике режимде сағыштырып ҡарағанда, форсированный режимда бораулауҙың станок-айҙа ла, станоктар һанында ла, эксе кесторенде лә күп өҫтөнлөгөн күреп була.

Форсированный режимда бораулаған скважиналар буйынса өлгәшелгән ыңғай һөҙөмтәләр менән бер рәттән, бик күп файҙаланылмаған резерватор ҙа бар. Атап әйткәндә, бораулауҙың файҙалы ваҡыты әле нормалағыса күрһәтелмәй, унда ярҙамсы эштәр бик ҙур урын алып торалар. Шуңлыҡтан форсированный режимда бораулау өсөн теге йәки был бригаданы ҡеүәтле насостар менән генә тәьмин итеү түгел, ә материаль-техник тәьминәтте лә байтаҡ яҡшыртыу, ярҙамсы эштәрҙең һәм күтәреү-төшөрөү операцияларының ваҡытын ҡыҫҡартыуға йүнәлдерелгән ойоштороу эштәре кимәлен күтәреү талап ителә.

Мастер иптәш Алексеев етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһының һөҙөмтәһе тағы ла яҡшыраҡ булды. Унда проходка тиҙлеге станок-айға 1004 метр, механик тиҙлек 5,48 метр-сәғәт тәшкил итте, ә бер долотоның проходка биреүе— 17,9 метр, файҙалы ваҡыт 90 процент булды. Ул форсированный режимдағыға ҡарағанда байтаҡ юғары.

Бораулау эшендә юғары коммерческий тиҙлеккә өлгәшеү өсөн бөтәһенән элек, оборудованиеларҙы даими рәүештә төҙәк хәлдә тотоу, бригадаларҙа хеҙмәтте берҙәм ойоштороу талап ителә. Долотоларҙы бораулаңырға тейеш булған ер ҡатламдарының ҡатылығына ҡарап һайлау һәм балсыҡ иҙелмәләрен геологик-техник нарядтарҙа күрһәтелгән сифатта ғына ҡулланыу ҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Шулай уҡ тиҙләтелгән метод менән бораулаусы бригадаларҙың эш тәжрибәләрен башҡаларға таратыу, уларҙы производствоға индереү практикаларын киң ҡулланырға кәрәк. Бригадалар һәм вахталар араһында социалистик ярышты киң йәйелдергәндә, материалдарға экономия яһауға, аварияһыҙ һәм простойһыҙ эшләргә өлгәшергә мөмкин. Ярҙамсы эштәргә ваҡытты ҡыҫҡартҡанда, оборудованиеларҙа тулы ҡеүәтендә эшләтеү иҫәбенә насостарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәргәндә, турбобурҙың забой ҡеүәтә арта. Бының менән иңле механик тиҙлек тә күтәрелә.

Скважиналарҙы бораулау эштәренең үҙенә төшөү хаҡын кәметеү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Унан һуң, тиҙләтелгән режимда бораулағанда оборудованиелар тиҙ туҙа, тиген фекергә ҡаршы сығырға мөмкин. Әгәр үткән йылда бөтә скважиналар ҙа тиҙләтелгән метод менән бораулаған булһалар, был ваҡытта 8 миллион һумға экономия яһалған булыр ине. Шуға күрә бөтә иғтибарҙы турбин ысулы менән тиҙләтелгән режимда ҡулланыуға йүнәлтергә кәрәк. Быйыл форсированный режимда бораулаусы 21-22 станок талап ителә. Иҙелмә биреүсе 16-17 дана ҡеүәтле насостар булдырырға кәрәк. Был, әлбиттә, еңел эш түгел. Ләкин, әгәр етәксе работниктарҙың яҡындан торып ярҙамы булһа, уны һис һүҙһеҙ булдырырға мөмкин.

Бынан башҡа бригадаларҙы эштән бушатыу өсөн скважиналарҙы үҙләштереү процессын яҡшыртырға, эшсе көстәрен эш урындарына ҡуйыуҙа үҙгәртеү индереү, вышка-монтаж цехтарын квалификациялы кадрҙар менән тәьмин итеүҙә көсәйтергә кәрәк.

Форсированный режимда эшләүсе бригадаларҙың һаны артҡас, вышка-монтаж цехтары коллективтарына айырыуса берҙәм, тиҙ һәм аныҡ эшләү талап ителә. Сөнки, билдәле булғанынса, производство циклы бик ныҡ ҡыҫҡара. Әгәр форсированный режимда бораулау тиҙлеге, 1950 йылғы тиҙлек менән сағыштырғанда, 20 процентҡа күтәрелһә, тик 20 бригада тиҙләтелгән режимда, ә ҡалған станоктар нормаль режимда бораулағанда ғына ла, төҙөлөш-монтаж эштәре процессы 40 проценттан артығыраҡҡа тиҙләтергә һәм эш күләмен 30 процентҡа яҡын арттырырға кәрәк. Был шарттарҙа бораулау бригадалары йылына 6000 метр проходка бирә алалар.

1950 йылда беренсе номерле бораулау конторалары коллективы һәм уның етәкселәре форсированный режимда эшләүсе бригадалар һанын арттырыуҙа [illegible] эштәр башҡарҙылар. Ә икенсе [illegible] контора тиҙләтелгән режимда [illegible] бик күп скважина бораулаңы. [illegible] бораулауы уңышһыҙ булды.

1951 йылда ике контора ла [illegible] эшен, 1950 йылға ҡарағанда, [illegible] шыртылар. Ләкин әле уларҙың [illegible] пен дә техник етәкселәре [illegible] режимда эшләүсе бригадалар һаны[illegible] тырыу менән насар шөғөлләнәләр. [illegible] се номерле контораның форсиров[illegible] режимда бораулаусы мастер иптәш [illegible] Беляшинов бригадаһы, дәрәжә [illegible] авария бригадаһына әүерелдерел[illegible] кән йылдың декабрь айынан [illegible] аварияны бөтөрөү буйынса [illegible] бойҙа эшләй. Алдынғы бригада [illegible] йылда 8000 метр проходка [illegible] циалистик йөкләмә алды. Был [illegible] биш девон скважинаһы бораулау[illegible] йеш, тиген һүҙ. Бурыс еңел [illegible] күрә алған йөкләмәне үтәү өсөн [illegible] гада йылдың ҡалған айҙарын[illegible] эшенә лә, төрлө әҙерәк һәм [illegible] тәргә лә бүлергә тейеш.

Былай метод, әлбиттә, [illegible] метод менән бораулаусы [illegible] ның артабан арттырыуға [illegible] ҡына булып тора. Шуға күрә [illegible] конторалары етәкселәренә бер [illegible] путты ла юғалтмайынса [illegible] форсированный режимын [illegible] тулыһынса индереү сараһын [illegible] йештәр.

Октябрьский нефтселәренә һәм [illegible] лаусыларына бөйөк юлбашсы[illegible] Сталинға яҙған хатта алынған [illegible] ларҙе срогынан алда уңышлы [illegible] бөтә мөмкинлектәр бар, һәм [illegible] вәғәҙәне быйыл намыҫ менән [illegible]

К. Ну[illegible]

«Туймазыбурнефть» трест[illegible] номерле бораулау конто[illegible] план бүлеге начальнигы.

Радиоприемник янында

Мин бында бынан 30 йыл элек, граждандар һуғышы вакытында булғайным. Ул сакта был урындағы өйҙең ес тәҙрәһе лә тип әйтерлек ҡарындыҡ менән ҡапланғайны. Хәйрулла ағай менән Сәхибә еңгә күп йылдар шунда йәшәгәндәр. Ғүмерҙәре Тимербулат байҙа эшләп үткән. Бәләкәй балалары Фәтихә менән Хәмит күп көндәрен бер һыныҡ икмәккә ярыҡып, илап үткәргәндәр.

Хәҙер инде ул ваҡыттарҙан һуң күп йылдар үтте. Элекке ҡарындыҡ тәҙрәле өй урынында ҙур алты мөйөшлө яңы өй ҡалҡыған. Ләкин хәҙер Хәйрулла ағай ҙа, Сәхибә еңгә лә юҡтар инде. Хәмит ҙур кеше, Өфөлә ғилми работник булып эшләй, ә Фәтихә колхоздың баҡсасылыҡ бригадаһы бригадиры булып эшләй, дан алған, район Советына депутат булып һайланған һәм хәҙер был йорттоң хужаһы булып ҡалған.

Өйҙәң эсендәге йыһаздар ҙа бөтөнләй башҡа хәҙер. Унда стенала сәғәт, уның янында фото карточкалар, түрҙә комод бар, уның өҫтө ап-аҡ скатерт менән ҡапланып, көҙгөләр, одеколондар менән биҙәлеп тора. Түшәмдән аҫылынып торған электр лампаһы өй эсендәге йыһаздарҙы нурға күмә. Тәҙрәләр ҙә хәҙер ҙурҙар инде һәм яҡтары аҡ булуға буялған.

Бөтә өй йыһаздары араһында радиоприемник үҙенә айырыуса иғтибарҙы йәлеп итә.

— Радио беҙҙең күптән үк бар инде. Был «Родина» приемнигы, тине Фәтихә,— радио тураһында һөйләй башлап. Теләһә ни ваҡытта һөйләй, музыка уйнай, йырлай. Ниндәй телдә теләһәң, шул телдә тыңлайһың: русса, башҡортса, татарса тыңларға мөмкин. Мәскәүҙән ниндәй заҡон сыҡһа, ниндәй хәл булһа, шул сәғәттә үк һинең әллә ҡайҙағы ауыл өйөңә килеп етә. Кем генә, ниндәй генә, ҡайһы халыҡ ни кешеһе уйлап сығарҙы икән был нәмәне?

— Бындай ҙур нәмәләрҙең бөтәһе лә тип әйтерлек, — тим мин уға, — беҙҙең илдә уйлап табылған улар. Радионы ла рус ғалимы Александр Степанович Попов, 1895 йылда уйлап тапҡан. Шуға күрә лә беҙҙең СССР радионың да тыуған иле. *Ләкин радио уйлап табылған сакта* Рәсәйҙә помещиктар, капиталистар һәм батшам хөкөм һөрә ине. Царизм радиоға ҙур иғтибар бирмәне.

Бары тик Октябрь Социалистик революцияһынан һуң ғына, Рәсәйҙә Совет власы урынлашҡас ҡына, радио хеҙмәтсәндәр интересына хеҙмәт итә башланы һәм тиҙләтелгән темптар менән алға китте. Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһынан һуңғы радио тапшырыуҙың һәм радиотехниканың үҫеүе Ленин һәм Сталин исемдәре менән бәйләнгән.

— 1917 йылдың 22 ноябрендә бөйөк Ленин бөтә халыҡҡа радио аша мөрәжәғәт иткән. Был ваҡытты донъяла тәү тапҡыр радио аша тапшырыу башланған ваҡыт тип иҫәпләргә мөмкин. Ләкин ул йылдарҙа ла радио массовый түгел ине әле.

Хәҙер радио тапшырыу һәм радио промышленносы бик нык алға китте. Ҡалаларҙа, эшсе поселкаларында, тимер юл станцияларында ғына түгел, бәлки поездарҙа, самолеттарҙа, пароходтарҙа, трактор бригадаһы вагончиктарында, хатта бик күп автомашиналарҙа ла радионы эшләтергә була. Хәҙер Советтар Союзында 10 миллионға яҡын радио точка, бер миллион самаһы радиоприемник бар.

Беҙҙең социалистик илдә радио барлыҡ милләт халыҡтары интерестарына хеҙмәт итә. Улар үҙҙәренең әсә телендә радио тыңлайҙар. Быны раҫлау өсөн СССР-ҙа 70-тән артыҡ халыҡ телендә радио тапшырыу барғанын күрһәтеү ҙә етә.

Башҡалабыҙ радиоһының тапшырыуҙарын илебеҙҙең иң алыҫ мөйөштәрендә йәшәүселәр ҙә һәр көн һайын ишетәләр, уға күп миллионлаған хеҙмәтсәндәр ҡолаҡ һалалар, беҙҙең радио империализм илдәрендәге көсөк ялған хәбәрҙәр таратыу ҡоралы һәм яңы һуғыш уты тоҡандырыуҙы пропагандалаусы булып тормай. Ул, кешеләргә большевистик тура һүҙҙе еткерә, бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе Советтар Союзының гүзәл тормошон хәбәр итә.

СССР-ҙағы башҡа өлкә һәм республикаларҙағы кеүек үк, беҙҙең республикала ла радиофикация һәм радио тапшырыу эштәре гигант аҙымдар менән алға китә. Хәҙер йөҙ меңдән артыҡ радиоточка һәм 14 мең радиоприемник эшләй.

Фәтихә беҙҙең һүҙҙе ҡеүәтләп:

— Уныһына мин ышанам, 10—15 йыл элек кенә беҙҙең был тирәләге ауылдарҙа ла бер кешелә лә радио юҡ ине, ә хәҙер беҙҙең ауылда 50-ләп кешелә радиоточка, ә унлап кешелә радиоприемник бар. Беҙҙең был тирәләге колхоздар берләшеп, Өҫән һыуын быуып, һыу электр станцияһы һалғайнылар. Колхоздарға яҡтылыҡты ла шул станция бирә, радиоузелды ла шул эшләтә. Әле ул ғына ла түгел, беҙҙең бында электрҙың эшләмәгән эше юҡ тиһәң дә ярай, тирмәнен дә шул тарттыра, көҙ көнө ашлыҡты ла шул һуға, таҡтаны ла шул яра, хатта һыйырҙарҙы ла шул электр көсө менән һауа башланылар. Уның файҙаһын һөйләп бөтөрөп булырлыҡ түгел. — ти.

Бына радио һөйләй башланы. Тыңлағыҙ, Өфө һөйләй! Хәҙер Приют МТС-ы трактор бригадаһы бригадиры иптәш Ғәбәйҙуллиндең сығышын тыңлағыҙ. Сығыш магнитофон яҙмаһында бирелә, — тине диктор.

Һүҙ магнитофонға күсте.

— Күптән дә түгел, бынан бер нисә йыл ғына элек әле, Өфөлә радио аша һөйләтеү өсөн кешене студияға килтерергә кәрәк ине, ә хәҙер ул үҙе эшләгән ҡалаһында, ауылында торып та Өфөнән, йә башҡа теләһә ниндәй ҡаланан һөйләй ала. Радио хәбәрселәр, радио техниктар кешенең тауышын яҙып ала торған аппарат менән үҙҙәре киләләр ҙә, һөйләүе кәрәк булған кешенең сығышын магнитофон тигән махсус аппарат менән тар ғына таҫмаға яҙып алалар. Ә һуңынан уны теләһә ниндәй ваҡытта радио студиянан икенсе бер аппарат аша тапшыралар. Кеше үҙен әллә нисә мең километрҙа торып тыңлай ала.

Ул ғына ла түгел, беҙҙең техниктар ауылға килмәйенсә лә һеҙҙең һүҙҙе яҙып алалар. Быны өсөн хәҙер кәрәкле кешене телефон аша һөйләтеү ҙә етә. Ауыл Советындағы телефон аппаратын Өфөгә радиостудияһының аппараттар бүлегенә тоташтырып, һеҙ шул телефон трубкаһынан һөйләһәгеҙ, уны ла яҙып алалар, һуңынан теләһә ниндәй ваҡытта эфирға тапшыралар.

Бына ошо аппараттар тарафынан яҙылған музыка һәм йырҙарҙың лентталары, пластинкалары күбәйтелеп, башҡа республикаларға һәм өлкәләргә ебәрелә. Беҙҙең Өфөлә лә улар хәҙер бик күп. Унда рус, украин, башҡорт, татар һәм башҡа бик күп кенә халыҡтарҙың йырҙары һәм музыкалары яҙылған. Шуға күрә радио аша бирелгән ҡайһы бер концерттарҙа, митингыларҙан тапшырыуҙарҙа уларҙа кешеләрҙең сығышы бирелһә лә, уларҙың береһенең дә студияла булмауҙары мөмкин.

Беҙҙә радиотехника бына нисек алға китте ул!

М. Бинбулатов.



7 майҙа республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре радио көнөн билдәләргә әҙерләнәләр.

Һүрәттә (һулда): Өфө нефть ғилми-тикшеренеү институтының директоры М. Мәүлютова Өфө радио студияһында микрофон алдында сығыш яһай, (уңда) Башҡорт радио информация комитетының звукооператоры С. Ҡатаев магнитофон аппараты эргәһендә.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

БАШЛАП ЯҘЫУСЫ А. ИГЕБАЕВ ШИҒЫРҘАРЫ

Һуңғы ике-ес йыл эсендә Башҡортостан өлкә газеталары һәм журнал биттәрендә Абдулла Игебаевтың шиғырҙары йыш ҡына күренә башланы. Баҫылып сыҡҡан һәм әле баҫылмаған шиғырҙары араһында иғтибарҙы йәлеп итерлек күп кенә шиғырҙар бар. Ул үҙенең шиғырҙарында аҙ ғына һүҙ менән бай мәғәнә бирергә тырыша. Был — шағирҙың маҡтаулы сифаты, сөнки тәрән мәғәнәле ҡыҫҡа шиғырҙар шағирҙан оҫталыҡ талап итәләр.

Абдулла Игебаев балалар йортонда тәрбиәләнеп, 1950 йылда Башҡортостан государство педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамлап сыҡты. Юғары белемле йәш шағир, яҙыусы хеҙмәтенең еңел түгел икәнлеген аңлап, үҙ белемен үҫтереү өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләп килә.

Бөгөнгө номерҙа беҙ уның бер нисә шиғырын бирәбеҙ.

ЙӘШӘҺЕН ТЫНЫСЛЫҠ

Беҙ еңеүсе,
хеҙмәт батырҙары,
бәхет,
байлыҡ
ижад итәбеҙ;
Ергә һуйыш,
һуғыш кәрәк түгел
Беҙ тыныслыҡ талап итәбеҙ!
Тормош күркен, выждан, намыҫ иркен,
йәшәү йәмен,
азат теләкте,
Мөмкинме һуң быуыу,
ҡан һауҙырыу
Миллионлаған эшсән йөрәкте?!
Юҡ!
Долларҙы,
океан арты ишет:
Тыныслыҡ һүҙе яңғырай
бар ергә;
һеҙ аңлағыҙ:
тиҙҙән төшәрһегеҙ
Үҙегеҙ ҡаҙыған тәрән ҡәбергә.
Нактонганда,
Кымга буйҙарында
Бомба шартлай, бомба ярыла;
Был енәйәт,
енәйәт
ишетегеҙ:
Һеҙҙең ауыллыҡ был бары ла!..
Һеҙ түгелме
тыныслыҡ яҡлыларҙы
«Бишенсе колонна» тип атаған;
Һеҙ түгелме, кореецтар ерен
Ҡанлы аяҡ менән тапаған?!.
Һеҙ ул вәхши, океан шакалдары,
Һеҙ тормоштоң зәһәр йыланы,
Һеҙ ул теләйһегеҙ һатлыҡ йәндәр
Ҡол итергә бөтә донъяны.
Барып сыҡмаҫ ахмаҡ һаташыуҙар.
Юҡ... кешелек һеҙгә баш эймәҫ,
Дуҫтар ер һауаһын һулап үҫәр,
Пәшлек сәскә атыр, ер һаймаҫ!..
Уҫал ҡарғыш,
нәфрәт, ҡаһәр менән
Халыҡ әйтә
Бөгөн һәр телдә:
— Ергә һуғыш ҡанат йәйә алмаҫ.
— Хыянатсыларҙы үлемгә!
Ҡаты яза, һуңғы хөкөм килә,
Эйзенхауэр,
Плевен,
Жюль-Мокка,
Трумэнсе эттәр,
лисынмандар
Тонсоғорҙар меңгә тыңлыҡҡа.
Балҡы тормош,
нурҙа,
йәшә ирә,
Яңғыра, шат йыр,
урғыл,
ҙур шатлыҡ.
Тыныслыҡ яҡлаусылар берләшегеҙ,
Ғәҙел сафтар булһын,
корос,
нык!..
Ҡәбәрынын ҡыуыҡ агрессорҙар
Саҡырһа ла яңы һуғышҡа,
Тыныслыҡ ул халыҡ көсөк көслө.
Ул хакимлек итер тормошта.

ӘСӘЙЕМӘ

Йәшләй ҡалғанғамы әсәкәйем,
Тоҫморламайым шул йөҙөңдө;
Тик һаман да ҡайнар һөйөү менән
Йөрәгемдә йөрөтәм үҙеңде.
Ләкин үкенергә һис урын юҡ
Әсә йылылығы күрмәүгә;
Сөнки илем сикһеҙ бәхет бирҙе
Ҙур тормошҡа табан үрләүгә.
Детдом алды йылы ҡосағына
Ата-әсәнән артыҡ ҡараны,
Белем бирҙе, һөйҙө, иркәләне,
Бер етемдән кеше яһаны.
Таң шикелле барыр юлым яҡты,
Тормош булып тыуа уйҙарым,
Хеҙмәтемдең аҫыл гөлдәренә
Биҙәкләнә ғүмер юлдарым.
Йөрәгемдә май ҡояшы көлә,
Яҙ һауаһын һулай күкрәк,
Күңел түгәлендә хистәремдән
Шатлыҡ гөлө үҫә күкрәп.
Әсәй бөгөрем, улың етем түгел,
Илем бирҙе бәхет мандаты,
Һәм мин коммунизм осоронон
Сталин үҫтергән батыр һалдаты.

КОММУНИЗМДЕҢ ЙӘШ ҠАЛАҺЫ

Асфальт урам, гүйә көҙгө төҫле
Ялт-йолт итә киске уттарға,
Мин һоҡланып уҙам, йәш ҡаламдың
Күрке булған яңы йорттарға.
Нисек шатланмаҫҡа! Миллион йылдар
Онһеҙ ятҡан башҡорт далаһы
Ҡосағында үҫә Октябрьский,
Коммунизмдең бер йәш ҡалаһы.
Тормош ҡайнай, гүзәл йыр яңғырай
Шат, бәхетле йәшәй кешеләр.
Бында ижад итә Куприянов,
Балабанов, Ҡасим ишеләр.
Улар үҙ еренең хужалары
Биҙәүселәр Тыуған илемде,
Ауыр көрәш, хеҙмәт, ижад менән
Яулап алыусылар еңеүҙе.
Октябрьский!
Ҡотлай Тыуған Ватан
Һинә биш йәш тулған саҡтарҙа
Һәм ул белә һинең артабан да
Буласағың алғы сафтарҙа.

КОММУНИЗМ ГӨЛДӘРЕ

Ҡоллоҡ, бығауҙарҙан азат итеп
Һәм уялтып тәрән яраны,
Ватанымды яҡты нурға күмеп
Лениндең ҙур ҡояш ҡараны.
Шул ҡояштан һүнмәҫ нурҙар алып,
Һулымаҫҡа гөлдәр тереләр,
Изге тупраҡҡа тамыр йәйеп,
Дағлы тормош өсөн үрелде.
Яҙын, ҡышын гөлдәр күкрәп үҫер,
Шиңдерә алмаҫ океан елдәре;
Сөнки, улар Ленин баҡсаһының —
Бөйөк коммунизм гөлдәре.

ЛЕНИН

Тарих белмәй, ишетмәне лә юҡ
Бөйөк даһиҙарҙың үлемен,
Бешелек онота алмаҫ һис ваҡыт та
Бәхет, дан ҡояшы — Ленинен.
Ленин васыятына тоғро булып
Сталин йәшәй Тыуған илемдә,
Тимәк: Ленин тере, Ватанымды
Яҡты еңеүгә илтә бөгөн дә.

ЯҠЫНАЙТ КОММУНИЗМ КИЛЕРЕН...

Паровоздар ярһып алға саба,
Эйәрәләр йәшел вагондар,
Хәйерле юл теләп оҙатып ҡала
Иркен баҫыу, ҡала, ауылдар.
Паровоздар байлыҡ тейәп уҙа
Арыу белмәй көнөн, төнөн дә,
Тыныс йәшәү һәм мул тормош өсөн
Бәхет иле — Совет илендә.
Машинист дуҫ, йәшен тиҙлегендә
Үт Ватандын сикһеҙ киң ерен,
Хеҙмәтеңдә халыҡтың эшенә ҡушып
Яҡынайт коммунизм килерен...

ҮЛЕМҺЕҘ ДУҪҠА

Суйыр ташҡа серен һөйләй-һөйләй
Ирәндектән шишмә төшкәндә,
Сәләмләгән көсөк зәңгәр таңды
Бәнсыҡыштан елдәр иҫкәндә,
Күҙен текәп әсә бер нөктәгә
Талығып көттө улы ҡайтыуын,
Ул ҡайтманы... фәҡәт ай байытып
Көтөп алды таңдың атыуын.
Яу беркәтә бөйөк көрәштәрҙә
Халыҡтың өсөн бирҙең ҡаныңды,
Ләкин үлем генә һындыра алмай
Батырлыҡта тыуған даныңды.
Һөйгән әсәң һине юғалтһа ла,
Ҡәбер айырһа ла араны,
Ил хөрмәтләй, әсә һөйөү менән
Йөрәгендә һаҡлай баланы.

НАЗЫМ ХИКМӘТКӘ

Ҡараңғыла хәлһеҙләнгән Хикмәт,
Ун ике йыл тормош күрмәне,
Ун ике ҡыш, ун ике йәй буйы
Тыуған ерҙәрендә йөрмәне.
Ләкин йонсоған һәм ауырыу шағир,
Көмөштәй сал ҡуйһа ла сәсенә,
Йыры менән һаман шат, йәш булды,
Тоғро торҙо халыҡ эшенә.
Ул иректә... Ләкин Төркиәһе,
Әсирлектә, тотҡон ҡош һымаҡ;
Күп тә үтмәҫ, белем, бар ер шарын
Азатлыҡта күрер был быуат.
Шағир тауышы тимер ҡыршау аша
Яңғырайһа ирек хаҡында,
Бөгөн дә ул, халыҡ менән атлай.
Тыныслыҡ һөйөүселәр сафында.

ШАҒИР

Шишмәләр тынмаған көсөк ағыуҙан,
Шағир күңеле тынмай шиғыр яҙыуҙан.
Ҡояш нурһыҙ булмаған көсөк күккә,
Ергә йырһыҙ йәшәй алмай ул һис тә.
Йылдар үтә... һыуҙар ҡорой йылғала,
Ләкин, шағир һаман йырлай донъяла.
Шағирға юҡ, тормоштоң һис үлеме,
Сөнки шағир халыҡтың саф күңеле.

РАДИО КӨНӨ

Советтар иле һәр йыл һайын етенсе майҙа радио көнөн байрам итә. Радионы уйлап табыусы Александр Степанович Попов бөйөк рус ғалиме булғанлыҡтан Тыуған илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре был көндә тағы ла ҙур шатлыҡ һәм ғорурлыҡ менән билдәләйҙәр. Был көндә беҙҙең халҡыбыҙ радиотехника һәм радио тапшырыу өлкәһендә булған уңышлыҡтарға йомғаҡ яһай һәм киләсәккә бурыстар билдәләй.

Партияның, хөкүмәттең һәм личио иптәш Сталиндең радио тапшырыу һәм радиолаштырыу эшенә айырыуса иғтибар итеүҙәре арҡаһында радио беҙҙең тормошобоҙға нык килеп урынлашты. Хәҙер илебеҙҙең иң алыҫ мөйөштәрендә лә радио тыңламаған кеше юҡ. Ул беҙҙең фән һәм культура өлкәһендә булған ҡаҙаныштарыбыҙҙы киң халыҡ массаһына еткерә, марксизм-ленинизм идеяларын пропагандалай. Радионың халыҡ хужалығында әленән-әле киң ҡулланылыуы һәм артабан үҫеүе рус ғалиме Поповтың уйлап табыуының ниндәй ҙур тарихи әһәмиәтле икәнлеген раҫлай.

Александр Степанович Попов 1859 йылда Уралда тыуған. Ул Пермь семинарияһын тамамлағандың һуңында Петербург университетына уҡырға ингән. Был йылдарҙа электротехника яңы ғына тыуып килә һәм электр көсөн яҡтыртыу өсөн файҙаланыу буйынса тәүге тәжрибәләр генә үҙғарыла ине. Попов 1883 йылда яҡшы һеҙәмтәләр менән университетты тамамлағандың һуңында электр көсөн практикала ҡулланыу менән бик нык тыҙыҡһына, һәм ошо хыялын тормошҡа ашырыу нияте менән Кронштадттағы Мина мәктәбенә уҡытыусы булып инә. Ул бында 18 йыл эшләй һәм был йылдар Александр Степановичтың бөтә донъя күләмендә дан килтерҙе. Уҡытыусылыҡ эше менән бер рәттән ул фәнни эш менән дә шөғөлләнә. Был ваҡытта А. С. Попов радионы уйлап табыу менән тамамланған етеҙ электрик тирбәлеүҙәре өлкәһендәге тикшеренеү эштәрен башлай. Ошо йылдарҙа Попов үҙенең бер лекцияһында донъяла тәү тапҡыр «электрик нурҙарын» алыҫлыҡҡа сигналдар биреү өсөн ҡулланырға мөмкин буласаҡ, тигән фекерен әйтте. Ул был фекерен 1895 йылда байтаҡ ҡына алыҫлыҡтан электрик тулҡындарын ҡабул итергә һәләтле булған грозоотметчик тигән приборын эшләү менән практикала иҫбат итте.

1895 йылдың 7 майында Александр Степанович Петербургтағы рус физика-химия обществаһының физика бүлеге ултырышында доклад менән сығыш яһай һәм үҙенең приборын демонстрациялай. Ошо ваҡыттан башлап был көн радионы уйлап табыу көнө булып иҫәпләнә. Был ултырышта А. С. Попов һүҙен тамамлап былай тине: «Һеҙәмтәлә шуға ышаныс белдергем килә, етерлек энергияһы булған электр тирбәлеүҙәренең сығанағы табылғас та, минең был приборҙы камиллаштырғандан һуңында, етеҙ электр тирбәлеүҙәре ярҙамында алыҫлыҡҡа сигналдар биреү өсөн файҙаланырға мөмкин буласаҡ».

Попов 1896 йылдың 12 мартында шул уҡ рус физика-химия обществаһының ултырышында донъяла беренсе тапҡыр радио тапшырыуҙы башҡара. Радио тапшырғыс приемниктан 250 метр алыҫлыҡта урынлаштырылған хәлдә Морзе азбукаһы ярҙамы менән кешелек тарихында тәү тапҡыр ике һүҙҙән торған радиограмма тапшырыла.

Попов үҙенең тәжрибәләрен, тикшеренеүҙәрен һәм уйлап табыуҙарын практика менән тығыҙ бәйләй. 1897 йылда ул үҙенең приборҙарын диңгеҙ шарттарында ҡулланып ҡарай. Ошо уҡ ваҡытта ул донъяла беренсе тапҡыр электромагнит тулҡындарының караптарҙан кире ҡағылыуын таба һәм ул һуңынан радиолокация техникаһында ҡулланыла.

1899 йылдың көҙөндә «Генерал-адмирал Апраксин» броненосецы Гогланд утрауы эргәһендә аварияға осрай һәм боҙ ватҡыс «Ермак» уға ярҙамға сыға. Броненосецта ремонт эштәрен башҡарыу өсөн материк менән утрау араһында бәйләнеш урынлаштырыу кәрәк була. Шуның өсөн 1900 йылдың 6 февралендә Фин ярында Ҡотка ҡалаһы эргәһендә һәм Гогландта Попов тарафынан радиостанциялары төҙөлә һәм ике арала сымһыҙ бәйләнеш урынлаштырыла.

Кешелек тарихында беренсе тапҡыр радио аша тапшырылған официаль телеграмма Гогландтағы «Ермактың» командирына боҙ өҫтөндәге 50 балыҡсыны ҡотҡарырға кәрәклеге тураһында хәбәр бирә. «Ермак» шунда уҡ диңгеҙгә сыға һәм балыҡсыларҙы ҡотҡара. Шулай итеп радиосвязь кешеләрҙең тормошон ҡотҡарырға ярҙам итә.

Ошо ваҡиға айҡанлы Кронштадт портының командиры адмирал Макаров Поповҡа булған ҡотлау телеграммаһында былай тип яҙған: «Һеҙҙе уйлап табыуығыҙҙың гүзәл уңышы менән бөтә Кронштадт моряктары исеменән ысын йөрәктән ҡотлайым. Коткапан Гогландҡа тиклем 43 саҡырым арала сымһыҙ телеграф бәйләнешенең урынлаштырылыуы ҙур фәнни еңеү ул». Бынан һуң рус флотының бөтә судноларына сымһыҙ телеграф связеның гел тәрә итеп индерелә.

1901 йылда А. С. Попов Петербургтағы Электротехника институтының профессоры итеп билдәләнә һәм ул 1903 йылда беренсе халыҡ-ара радиотелеграф конференцияһында ҡатнаша.

Александр Сергеевич Попов үҙ иленең ысын патриоты ине. Батша Рәсәйһы ваҡытында уның ижади һәләтлектәрен үҫтереү өсөн бер ниндәй ҙә шарттар булмауына ҡарамаҫтан, А. С. Попов ул ваҡытта былай тигән: «Мин рус кешеһе, һәм мин бөтә белемемде, бөтә һәләтлегемде һәм бөтә ҡаҙаныштарымды фәҡәт үҙемдең тыуған илемә генә бирергә хоҡуҡлымын».

Поповтың донъяла беренсе тапҡыр радионы ижад итеүе кире ҡағылмаҫлыҡ фактар һәм дәлилдәр менән раҫланалар. Был фактар һәм дәлилдәр тарихи ысынбарлыҡты раҫлайҙар һәм радионы итальянец Маркони уйлап тапты тигән буржуаз фекерҙең уйҙырма әкиәт икәнен фашланылар.

Попов 1895 йылда уҡ әле донъяла беренсе радио аппаратын демонстрацияланы һәм 1896 йылда беренсе тапҡыр радио тапшырыу эшен башҡарҙы. Маркони Англияла патент өсөн заявка биргәндә уның аппаратының схемаһы бөтә яҡлап та Попов приборының схемаһына оҡшаған була. Был факт радионы уйлап табыу фәҡәт Поповҡа ғына ҡайтып ҡалғанлығын раҫлай һәм шуның өсөн бөтә совет халҡы был гениаль ҡаҙаныштың бөйөк рус халҡының улы тарафынан эшләнеүе менән ғорурлана. Һәм беҙҙең Советтар иле законлы рәүештә радионың Тыуған иле булып иҫәпләнә.

Радио беҙҙә тәүҙә связь өсөн файҙаланылды һәм шунан һуң хеҙмәтсәндәр массаһын коммунистик рухта тәрбиәләү сараларының мөһим тәренә әйләнде. Беҙҙең радиотехникабыҙ Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына сәскә атты.

1920 йылдың 21 июлендә В. И. Ленин хеҙмәт һәм оборона Советының «Социалистик радио төҙөлеше тураһында декрет» тигән ҡарарына ҡул ҡуйҙы. Был тарихи документ совет радио станцияларын төҙөү һәм уларға реконструкция яһау буйынса киң йәйелдерелгән программа билдәләгәйне. Ошо уҡ ҡарарҙа радио станцияларын төҙөү мәсьәләһе государство әһәмиәтендәге эш һәм уның бик тиҙ арала хәл ителергә тейешлеге тураһында күрһәтелгәйне.

Йәш совет республикаһында радиосвязең бик тиҙ үҫеүе Совет хөкүмәте һәм Владимир Ильичтең радио эшенә ниндәй ҙур әһәмиәт биргәнлеге тураһында һөйләйҙәр. Поповтың уйлап табыуҙары фәҡәт беҙҙең шарттарҙа ғына киң ҡулланыу тапты һәм беренсе сталинсе биш йыллыҡ осоронда Советтар Союзы территорияһы радио тапшырыу станцияларының күп селтәре менән ҡапланды. Илебеҙҙә көслө, оҙон тулҡынлы һәм ҡыҫҡа тулҡынлы радио станциялары төҙөлдө.

Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ ҡалаларҙы, ауылдарҙы радиолаштырыуға айырыуса ҙур иғтибар бирә. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу алдынан 6 миллиондан артығыраҡ репродуктор эшләй ине. Һәм хәҙер ул быға саҡлы күрелмәгән массовый төҫ алды. Беҙҙең радио тапшырыуҙарыбыҙҙы Тыуған илебеҙҙең миллионлаған халыҡтары һәм сит ил кешеләре тыңлайҙар.

Радио тапшырыу эше алға китеү менән бер рәттән, телевидение индереү эше лә ҡыҙыу темп менән бара. Һәм хәҙерге телевидение Совет радио тапшырыуын алға ебәреүгә гүзәл перспективалар аса. Телевидение аппараттарын тулыһынса үҙләштереү буйынса ҙур эштәр башҡарыла һәм төҫлө телевидение тапшырыу проблемаһы ла практик рәүештә хәл ителә.

Хәҙерге ваҡытта эшләүсе телевизион үҙәктәрҙән башҡа күп кенә ҡалаларҙа яңы телевизион үҙәктәр ҡороу планлаштырыла һәм күптәре төҙөлөп ята. Техниканың был яңы ҡаҙанышы ошо яҡын йылдарҙа массовый төҫ аласаҡ һәм халыҡтарҙың көндәлек тормошона нык инеп урынлашасаҡ.

Радио аппараттары хәҙер радио тапшырыуҙа ғына түгел, промышленность, медицина һәм халыҡ хужалығының башҡа тармаҡтарында ла киң ҡулланыу тапты. Һуғыштан һуңғы беренсе сталинсе биш йыллыҡта связь һәм радио средствоһы алға баҫтырылыу ғына түгел, ә яңы техника нигеҙендә артабан үҫтерелде һәм камиллаштырелде. Һуңғы йылдарҙа бигерәк тә радио тапшырыу һәм радиолаштырыу эше киң йәйелдерелде. Мәҫәлән, һуңғы биш йыллыҡта радио тапшырыу станциялары төҙөү заданиелары 39 процентҡа арттырып үтәлде.

Илебеҙҙе радиолаштырыу ҡала һәм ауылдарҙы электрлаштыреү менән тығыҙ бәйләнгән. Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен уңышлы тамамлау, илебеҙҙе артабан радиолаштырыуға тағы ла ҙур мөмкинлектәр тыуҙырасаҡ.

Башҡа республикалар менән бер рәттән, беҙҙең Башҡортостанда ла радио бик нык алға китте. Республикабыҙҙың бөтә район үҙәктәре радиолаштырылды. Радиоузелдар камиллашҡан көсәйтеүсе аппараттар менән байыҡтырылды һәм йылдан-йыл радио тапшырыу точкалары артта. Һуңғы биш йыллыҡта ғына республикала ҡеүәтле радио тапшырыу узелдары төҙөлдө һәм меңәрләгән яңы радио точкалар булдырылды. Радио тапшырыу узелдарының ҡеүәте һуңғы ике йыл эсендә генә ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа артты. Хәҙер беҙҙең республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәрендә 14 меңгә яҡын радиоприемник бар һәм башҡалар.

Партия һәм хөкүмәтебеҙ ауылдарҙы радиолаштырыу эшен яҡшыртыуға айырыуса ҙур әһәмиәт бирәләр. Быйыл Башҡорт АССР-ының связь управлениеһы күп кенә райондарҙа ҡеүәтле колхоз радиоузелдары төҙөү эшен башҡара. Был, радио точкаларын тағы ла арттырырға мөмкинлек бирәсәк.

Советтар Союзында радио халыҡ массаһы интерестары өсөн файҙаланылған бер ваҡытта, капиталистик илдәрҙә уның мәҡсәте бөтөнләй киреһенсә. Уларҙа радио яңы һуғыш утын тоҡандырыуҙы пропагандалауға, тыныслыҡ яҡлыларҙы әҙәрләүгә юнәлдерелгән.

Иртәгә Советтар Союзының хеҙмәтсәндәре радио көнө — 7 майҙы бөйөк уйлап табыу көнө итеп билдәләр һәм радио өлкәһендәге булған үҙенең яңы ҡаҙаныштарын демонстрациялар. Беҙҙең хеҙмәтсәндәребеҙҙең тормошона радионы массовый индереү, уны уйлап сығарыусы бөйөк рус ғалиме Александр Степанович Поповҡа иң яҡшы һәм иң гүзәл һәйкәл буласаҡ.

Н. Алаторцев,

Башҡортостан связь управлениеһының баш инженеры, связең 1 ранг директоры.

КИНО

„ТЫНЫС КӨНДӘРҘӘ“

Киев киностудияһы тарафынан эшләнгән «Тыныс көндәрҙә» тигән художестволы төҫлө фильм республикабыҙ кинотеатрҙарының экрандарында күрһәтелә башланы. Ул И. Прут сценарийһе буйынса эшләнгән һәм Владимир Браун тарафынан ҡуйылған. Фильмдең режиссеры — В. Брюнчугин, операторы Д. Демуцкий, художнигы — А. Бобровников, композиторы — Ю. Мейтус, звукооператоры — Г. Григорьев, консультанттар — I ранг капитандары Л. Хиййнен һәм В. Денисов.

Йәйге матур һәм йылы көндәр. Диңгеҙ өҫтө тыныс. Ваҡ-ваҡ тулҡындар ғына аҡ күбектәр сығарып бер-берсеһен ҡыуышып уйнайҙар ҙа, әллә ҡайҙа алыҫҡа китеп юғалалар. Йәшел ағастарға күмелгән яр буйы шат көләс йөҙлө һәм таҙа кәүҙәле матростар менән тулған. Һыу аҫты кәмәһенең экипажы хәрби уҡыуҙарҙан һәм әҙерлектәрҙән буш ваҡыттарҙа физкультура һәм спорт эштәре менән шөғөлләнә, ҡайһы берәүҙәр бейергә, йырларға, төрлө музыка инструменттәрендә уйнарға өйрәнәләр, художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәгенең нәүбәттәге концертенә әҙерлек бара. Мичман Григорьенко хеҙмәттән тыш ваҡытын үҙенең семьяһы — ҡатыны һәм ҡыҙы менән үҙғара. Матрос Павло Панчук библиотекала эшләүсе бер ҡыҙҙы ысын күңеленән ярата. Ә һыу аҫты кәмәһе командиренең ярҙамсыһы Орлов тыныс хеҙмәт, үҙенең һөйгәне менән бәхетле һәм күңелле семья тормошо ҡороу тураһында хыяллана. Шулай итеп фильмдең тәүге кадрҙарында тамашасылар алдына совет моряктәренең матур хыялдар менән тулы булған тыныс тормошло татыу һәм берҙәм семьяһы күҙ алдына килеп баҫа.

Ләкин уларҙың йөрәктәре тыныс түгел. Улар Америка, Англия империалистәренең өсөнсө бөтә донъя һуғышы утын тоҡандырырға маташыуҙарын бер генә минутҡа ла хәтерҙәренән сығармайҙар. Шуның өсөн моряктәр үҙҙәре араһында тәртипһеҙлеккә, тынысланып ҡалыуға юл ҡуймайҙар, һәр ваҡытта тыныс һәм ижади тормош эсендә ҡайнаған социалистик Ватаныбыҙҙы һаҡларға әҙер торалар.

Көндәрҙең берсеһендә совет һыу аҫты кәмәләре эскадраһы нәүбәттәге манёврға сыға.

Өсөнсө бөтә донъя һуғышына әҙерләнеүсе империалистик илдәрҙең берсеһендә, шул ваҡиғанан файҙаланып, совет ярҙары буйына разведка ебәрергә ҡарар итәләр. Һәм ул шулай эшләнә лә. Немец-фашистәре, япон самурайҙары ҡалдыҡтарынан һыу аҫты кәмәһе экипажы йыйнала һәм улар манёврҙарҙан файҙаланып, совет флагы аҫтында беҙҙең яр буйына яҡынлашалар. Был һыу аҫты кәмәһе яуыз ниәт менән унда миналар ҡалдыра. Манёврҙарҙан һуң ҡайтып килгән ваҡытта совет һыу аҫты кәмәһе «ПК—8» был миналарҙың берсеһенә килеп бәрелә. Һыу аҫтында кәмәнең борты тишелә һәм механизмдәре зарарлана. Ләкин экипаж паникаға бирелмәй. Улар үҙ көстәре менән кәмәнең тишелгән урынын һәм зарарланған механизмдәрен ремонтлай башлайҙар. Моряктәр ҡыйынлыҡтарға һәм ҡурҡыныстарға ҡарамайынса, һауа етмәһә лә үҙ постарын ташламайҙар, үлемгә ҡаршы, тормош өсөн батырҙарса көрәшәләр һәм кәмәне үҙ көстәре менән ремонтлап өҫкә күтәрәләр. Бында беҙҙең моряктәребеҙҙең батырлыҡтары, түҙемлелектәре һәм үҙ эштәрен яҡшы белеүҙәре, ғөмүмән уларҙың характерҙәре асыҡ һәм тулы итеп кәүҙәләндерелә. Павел Панчук, Тарас Григорьенко һәм Орлов образдары тамашасыларҙа айырыуса тәрән тойғо ҡалдыралар. Ауыр минуттарҙа экипаждан кемдәр һыу өҫтөнә күтәрелергә, кемдәр кәмәлә ҡалырға тейешле булыуы тураһында мәсьәлә хәл ителгәндә Павло Панчук былай ти: «Миңә үҙегеҙ менән кәмәлә ҡалырға рөхсәт итегеҙ, иптәш командир. Мин буйҙаҡ. Ә Мичман Григорьенконың ҡатыны, ҡыҙы бар. Улар уны көтәләр». Был ролдә уйнаусы артист С. Гурзо совет йәштәренә хас булған бөтә ыңғай сифаттарҙы ла үҙенә туплаған. Ул ҡыйыу, намыҫлы, аҡыллы һәм Тыуған илебеҙҙең бойондороҡһоҙлоғон һаҡлау өсөн йәнен-тәнен бирергә әҙер тора. Шулай уҡ картиналағы башҡа образдар ҙа тамашасыларҙа тәрән тәьҫир ҡалдыралар.

Ер шарында тыныслыҡ байрағын йөрөтөүсе, иркле ижади хеҙмәт менән йәшәүсе һәм коммунизм төҙөүсе совет халҡын күрә алмаған, уны ҡол итергә тырышҡан яуыз уйлы капитал хужаларына һатылған фашизмдең ҡалдыҡтары һыу аҫты кәмәһе менән разведка яһау өсөн совет ярҙарына килһәләр ҙә, улар совет моряктәре тарафынан диңгеҙ төбөнә ебәреләләр. Мәкерле фашистәрҙең ҡара уйҙары тормошҡа ашмай.

Йәшеллеккә һәм төрлө төҫтәге сәскәләргә сумған тыныс һәм күңелле тормош менән йәшәгән яр буйы шат һәм көләс йөҙлө халыҡтар, диңгеҙҙән яңы ғына манёврҙарҙан ҡайтҡан моряктәр менән тулы. Осо-ҡырыйы күренмәгән ғорур диңгеҙ һалмаҡ ҡына сайҡала. Яр буйына 3 совет офицеры баҫҡан. Уларҙың аҡыллы һәм уйсан ҡараштары диңгеҙ өҫтөнә төбәлгән. Фильм бына шулай тамамлана.

Был картинала төп герой булып совет моряктәренең бер ниндәй ауырлыҡтарға ла бирелмәй, бер ниндәй ҡыйынлыҡтарҙан да ҡурҡмай торған ҡыйыу, татыу һәм берҙәм семьяһы күҙ алдына килеп баҫа. Картинаның художество оформлениеһе һәм музыкаһы ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе тағы ла асыҡлай, матурлай һәм тулыландыра.

«Тыныс көндәрҙә» фильме совет кинематографияһының тағы ла бер ғүзәл еңеүе булып тора. Ул тамашасылар, бигерәк тә, йәштәр тарафынан бик яратып ҡарала.

Р. Хәсәинов.

АБЗАН РАЙОНЫНДА

Агитбригада колхоздарға сыҡты

Яҙғы сәсеү ваҡытында колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереү өсөн район йәштәренән агитбригада ойошторолоп, колхоздарға сығарылды. Агитбригаданың программаһында бер шаршаулыҡ «Бер туғандар» пьесаһы, халыҡ көйҙәре, бейеүҙәренән концерт номерҙәре бар.

Постановка һәм концерт алдынан ВЛКСМ район комитете работнигы иптәш Ә. Самарбаев «Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре» тигән темаға лекция уҡый.

Агитбригаданың сығыштарын колхозсылар яратып ҡарайҙар. Бригада менән район культура йорто работнигы иптәш Биниәбулатов етәкселек итә.

МТС электростанция алды

Быйыл Абзан МТС-ы дизель моторҙа эшләй торған электростанция алды. Ул шул йылдың сентябрь айҙарында эксплуатацияға бирeләсәк.

Электр көсө менән мастерскойҙа булған бөтә эш механизациялаштырылырға тейеш. Бынан тыш, район ойошмаларын, хеҙмәтсәндәрҙең һәм Каганович исемендәге колхоз члендәренең торлаҡтарын яҡтыртыу эше планлаштырылды.

Типография өсөн яңы машина

Район типографияһы газета һәм заказдар баҫыу өсөн яңы машина алды. Машина электр көсө менән эшләйәсәк. Ул быйыл көҙгә эксплуатацияға бирелә.

Яңы уҡыу йылына әҙерлек башланды

Районның мәктәптәре яңы уҡыу йылына әҙерләнәләр. Ҡарғалы ете йыллыҡ мәктәбе 35 кубометр утын әҙерләне һәм мәктәп ерәһенә ташыны ла инде. Үтәгол мәктәбендә лә 100 кубометр утын әҙерләнде. Был мәктәптәрҙә парталарға, өҫтәлдәргә, класс таҡталарына ремонт бара.

Ҡарт һунарсы

Әлмөхәмәт Шәрәфетдинов бабайҙың йәше 70-тән үткән булһа ла, һунарсылыҡ эшен дауам итә. Ул 12 йәшенән төлкө, 17 йәшенән бүре тота башлап, үҙ ғүмерендә 75 бүре, ике айыу һәм бик күп һанда башҡа йәнлектәр тотҡан.

1950—1951 йылғы сезонда ул 700 һумлыҡ йәнлек тиреләре тапшырырға йөкләмә алғайны. Тәжрибәле ҡарт һунарсының һүҙе эштән айырылманы. Ул үҙенең алған йөкләмәһен 186 процентҡа еткереп үтәне.

Д. Мәһәдиев.

Балалар библиотекаһында

Өфө ҡалаһының 11-се номерлы балалар библиотекаһы Якутов исемендәге балалар паркында урынлашҡан. Ул матур итеп йыһазландырылған. Стенала Ленин, Сталин портреттәре, уҡыусыларҙы тик отличноға ғына уҡырға саҡырып яҙылған лозунгылар, төрлө плакаттар һәм фотовитриналар бар. Бында «Беҙҙең иң яратҡан китаптарыбыҙ» тигән исем аҫтында ойошторолған махсус мөйөш уҡыусыларҙың иғтибарын үҙенә ылыҡтыра. Был мөйөштә балаларҙың яратҡан яҙыусылары А. Гайдар, С. Маршак, Л. Кассиль һәм башҡаларҙың балалар өсөн яҙылған китаптары бар.

Библиотека работниктәренән В. Е. Бочкарева һәм Н. П. Максимова иптәштәр үҙ эштәрен һөйөп башҡаралар. Улар уҡыусыларҙы һәр ваҡыт яғымлы ҡаршы алалар. Һөҙөмтәлә китап уҡыусылар һаны көндән-көн арта бара. Хәҙер бында бер меңгә яҡын даими китап уҡыусы иҫәпләнә. Тик 1951 йылдың өс айында ғына уҡыусылар һаны 525 кешегә артты.

Библиотеканың китап фонды йылдан-йыл арта. Хәҙер бында 12 меңдән артыҡ китап бар. Ҡала Советы исполкомы ағымдағы йылда библиотека өсөн тағы ла 15 мең һум средство бүлде.

Махсус уҡыу залы эшләй. Унда 15 исемдә газета, 23 исемдә төрлө журналдар алдырыла.

Библиотеканың 17 кешенән торған активе бар. Улар библиотека эше буйынса бик күп саралар үткәреүҙә ҡатнашалар, йорттарға китап йөрөтәләр һәм туҙған китаптарға ремонт яһайҙар. Һуңғы өс ай эсендә 50 китапҡа ремонт үткәрелде. Бынан башҡа улар уҡыу залында көн һайын дежурство алып баралар.

Мәктәптәрҙә яҙғы һынау ваҡыттары яҡынлаша. Шул уңай менән библиотека үҙ эшен тағы ла киңерәк йәйелдереп ебәрҙе. Уҡыу программаларына бәйләнешле булған төрлө китаптар һайлап алынды. Бынан тыш «Экзамендәргә әҙерлек өсөн ҡулланма материалдар» тигән исем аҫтында махсус мөйөш булдырылды. Һынауҙарға нисек әҙерләнеү тураһында докладтар, беседалар үткәрелә.

А. Баязитов.

Ҙур ойошҡанлыҡ менән

Яман йылға һал ағыҙыу конторaһы коллективы быйылғы һал ағыҙыу навигацияһын тәүге көндәрҙән үк әлгәле ойоштороҙо. Ҡышҡы сезонда әҙерләнгән ағас материалдарын йылғаға төшөрөү һәм ҡыуғын ҡыуыу эше ойошҡанлыҡ менән бара.

Сим йылғаһында 17 мең кубометр ағас 8 көн урынына 6 көндә йылғаға төшөрөлдө. Сарва йылғаһында ла ағасты йылғаға төшөрөү эше уңышлы тамамланды. Унда хәҙер 37 мең кубометр ағасты һалдыбаш йылғаһына тиклем ағыҙыу эше башланды.

Ағас ағыҙыусылар һәм һал бәйләүселәр, ағас материалдарының халыҡ хужалығы өсөн булған ҙур әһәмиәтен аңлап, навигация планын срогынан алда үтәү өсөн тырышалар һәм көндәлек эш нормаларын арттырып үтәйҙәр. Мәҫәлән, Мәсғүт Ғәйсин, Сәйфулла Нәбиуллин, Ғата Юлдашев, Рәис Абдулов, Зәйнәп Ғәлиәхмәтова һәм башҡа иптәштәр икешәр нормаға яҡын үтәлеш бирәләр. Ә иптәш Мирсәет Ғәйсиндең задание үтәлеше көн һайын 285 процент тәшкил итә.

Социалистик ярышта бындай стахановсылар һаны көндән-көн арта бара.

И. Дәүләтбаев.

Ағастар яҡшы булып үҫәләр

Баймаҡ районындағы Карл Маркс исемендәге колхозда өсөнсө йыл инде ағас ултыртыу буйынса 10 кешенән ойошторолған звено эшләп килә. Уның менән етәкселек итеү эше миңә йөкмәтелде.

Үҙған йыл звено члендәре көсө менән 5 гектар баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртылды. Хәҙер был ағастарҙың 85—90 процентенән артығыраҡы яҡшы булып үҫәләр.

Беҙ быйыл тағы ла 2 гектар майҙанда ағас ултырттыҡ. Быны өсөн 8 мең төп үҫентене Хәйбулла питомнигенән килтерҙек.

F. Насиров.

Колхоз агрономы, Социалистик Хеҙмәт Геройы.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 4 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 4 майҙа СССР вәкиле А. А. Громыко председателлегендә 43-сө ултырышы булып үтте. Хәбәр ителгәнсә, 2 майҙағы ултырышта АКШ, Великобритания һәм Франция делегациялары көн тәртибенең өс яңы вариантын тапшырғайнылар.

Көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеүҙе еңеләйтергә ынтылып, СССР делегацияһы 4 майҙағы ултырышта, өс делегация тарафынан тәҡдим ителгән көн тәртибенең «А» вариантын, әгәр ҙә [illegible] СССР вәкиле Громыко былай тине:

— Көн тәртибенең был вариантының беренсе пунктына [illegible] «СССР, Ҡушма Королевство, Ҡушма Штаттар һәм Франция [illegible]» [illegible]

— Шулай итеп, — тип билдәләне СССР вәкиле Громыко, — көн тәртибе буйынса килешеү хәҙер дүрт державаның [illegible]

— Көн тәртибенең пункттары урынлаштырыу тәртибенә килгәндә, — тип өҫтәне Громыко, — был мәсьәлә буйынса СССР делегацияһы былай белдерергә теләй, беҙ [illegible] индерергә тейеш булған бөтә пункттар ҙа тамам килешелгәндән һуң ҡайтырға тейешбеҙ.

СССР делегацияһы тарафынан тәҡдим ителгән тәҙәтеү менән көн тәртибенең беренсе пунктына былай тип әйтеләсәк:

«Европала йәшәгән халыҡ-ара көсөргә[illegible] [illegible] Германияны демилитаризациялау [illegible] Ҡушма Королевство, Ҡушма Штаттар һәм Франция [illegible]

[illegible] һәм көн үҙәгендәге проблемалар [illegible] министрҙәр Советының ҡарауына [illegible] булһа ла ситләшергә ынтылыуҙарын [illegible] ла бер тапҡыр демонстрацияланы.

Унан һуң Джессеп тәҡдиме буйынса ултырыш ябылды.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенән белдереү

ПХЕНЬЯН, 4 май. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 4 майҙа, Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровoлецтәре менән берлектә бөтә фронттарҙа ла ҡаты һуғыштар алып барыуҙы дауам итәләр, тип хәбәр итте.

Фронттың айырым участкаларында Халыҡ армияһының частәре дошмандың контратакаларын кире ҡағалар һәм [illegible] йәнле көстә һәм техникала ҙур [illegible] яһайҙар.

Көнбайыш фронтта Сеул [illegible] һуғыш алып барыусы Халыҡ армияһы частәре 4 майҙа дошмандың [illegible] атакаһын кире ҡаҡтылар һәм [illegible] дың 7 танкыһын юҡ иттеләр һәм 7 [illegible] летын атып төшөрҙөләр.

Америка агрессорҙары Ҡытайҙың пленға алынған добровoлецтәре өҫтөндә бактериологик ҡоралды һынайҙар

ПЕКИН, 4 май. (ТАСС). Синьхуа агентствоһы Корея фронтындағы үҙ хәбәрсеһенән түбәндәге хәбәрен тапшыра: Американың Кореялағы баҫҡынсы ғәскәрҙәре Ҡытайҙың пленға алынған добровoлецтәре өҫтөндә үҙҙәренең бактериологик ҡоралдарын һынайҙар.

Был американлылар Японияла һәм Ҡушма Штаттарҙа Кэмп-Детриктә бик күп һанда бактериологик ҡорал етештерәләр, тигән хәбәрҙе раҫлай.

Американың үҙен эпидемиология контроле судноһы итеп йөрөткән, ләкин ғәмәлдә йәшерен миссия үтәүсе һәм бактериологик ҡорал етештереү һәм һынау буйынса оборудование гөйәгән хәрби карабы күптән түгел Кореяның көнсығыш ярындағы Вонсан бухтаһына килгән, унда Ҡытайҙың пленға алынған добровoлецтәре бактериологик ҡоралды һынау өсөн экспериментальь материал сифатында файҙаланылғандар.

Америка журналы «Ньюсуик» «Бубонный чума судноһы» тигән мәҡәләлә 9 апрелдә былай тип яҙа: «Хәрби судноның — Төньяҡ Кореяның көнсығыш яр буйында күп ваҡыттар инде хәрби-диңгеҙ флоты тарафынан ҡамап алынған Вонсан портына килгән эпидемиология контроле буйынса лабораторияның йәшерен миссияһы тураһындағы хәбәрҙәрҙе күҙәтеп барығыҙ. Пехотаны ташыу өсөн десант судноһы булып торған был судно, — тип күрһәтә журнал, — сыскандар һәм ҡуяндарҙың тулы комплекты менән лаборатория оборудованиеһе менән йыһазландырылған». Америка журналы шулай уҡ, Американың хәрби-диңгеҙ десант отрядтары «порт оһанлағы ҙур булмаған утрауҙарҙа бер нисә Ҡытай ҡыҙылдарын тотҡандар һәм уларҙы судноға алып килгәндәр, бында ауырыу билдәләрен асыҡлау маҡсатторында бубонный чуманың үлем килтереүсе бактериялары улар [illegible] тәндә һыналғандар», тип хәбәр итә.

Американың Кореялағы баҫҡынсы[illegible] кәрҙәренең был енәйәтсел һәм [illegible] хәрәкәттәрен Ҡытай халҡы әрнеү[illegible] нән күҙәтә.

ПЕКИН, 4 май. (ТАСС). Синь[illegible] агентствоһы былай тип тапшыра:

Америка агрессорҙарының Кореяла [illegible] тайҙың пленға алынған добровол[illegible] бактериологик ҡоралды һынаған [illegible] экспериментальь материал сифатында [illegible] ҙаланыуҙары тураһындағы хәбәр[illegible] латма биреп, «Жэньминьжибао» газ[illegible] Американың Кореялағы интервен[illegible] тик ғәскәрҙәре кешелек мораленең [illegible] закондарына ҡаршы күп тапҡыр[illegible] ҡәт иттеләр һәм халыҡ-ара хоҡуҡ[illegible] ҙәләр. 1950 йылдың 1 декабрендә [illegible] Пхеньян провинцияһында Канхун[illegible] рика ғәскәрҙәре Ҡытайҙың пленға [illegible] ған 31 добровoлецте һәм Кореяның [illegible] ныс граждандын пулеметтарҙан [illegible] йыртҡыстарса үтерҙеләр. 1951 [illegible] 23 һәм 26 февралендә һәм 3 [illegible] улар Ханган йылғаһы районы[illegible] фронтта ағыулы газ тултырылған [illegible] лар һәм снарядтарҙы ҙур тапҡыр [illegible] ландылар. Хәҙерге ваҡытта улар [illegible] өҫҫөс йыртҡыслыҡ яһайҙар.

Америка агрессорҙары, тип яҙа [illegible] газета, бактериологик ҡоралды [illegible] асыҡ етештереү генә түгел, бәлки [illegible] химик экспериментттарҙа ла яһай[illegible] рика агрессорҙарын юҡ итеү өсөн [illegible] халҡы һәм бөтә донъяның тыныс[illegible] йөөүсе халыҡтары тағы ла ныҡ[illegible] рәкәттәр ағарта тейештәр. Амер[illegible] хәрби енәйәтселәре, тип яҙа [illegible] һүҙенә газета, һис шикһеҙ бөтә [illegible] халыҡтарының ғәҙел судына [illegible]

Редактор F. F. ҒАФ[illegible]

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

МАЛДАРҘЫ КӨТӨҮҘӘ ТӘРБИӘЛӘҮ

Малдарҙы көтөүҙә тәрбиәләү осоро башланды. Көтөү сезоны ҙур хужалыҡ әһәмиәтенә эйә булып тора. Был сезонда малдар йәшел, һутлы үләндәр менән туҡланалар. Был осор малдарҙы үҫтереүгә һәм продуктивлеген күтәреүгә ҙур йоғонто яһай.

Ҡышҡы ҡаты аҙыҡ ашауҙан ябыҡҡан малдар көтөүлектәрҙә ашатылғанда тиҙ һимерә һәм үҙенең элекке нормаль көрлөгөнә ҡайта. Мәҫәлән, 1949 йылда Арслан тоҡомсолоҡ совхозында һыйырҙар көтөү сезонының тәүге айҙарында уҡ ҡышҡы осорҙа юғалтҡан ауырлыҡтарын яҙҙа баҫтырҙылар.

Көтөүлектәрҙә ашатыу һыйырҙарҙың һөт бирәүсәнлеген яҡшырта. Арслан тоҡомсолоҡ совхозының һыйыр һауыусыһы Александра Барзайкина былтыр май—октябрь айҙары осоронда 13 баш һыйырҙың һәр берсеһенән уртаса 2107-шәр килограмм, ә ҡышҡы осорҙа иң бары 1648-әр килограмм һөт һауып алды.

Көтөүлектәрҙә ашатыу осоро малсылыҡ продукттарының үҙлә төшөү хаҡын кәмета. Был осорҙа көтөүлектәрҙе дөрөҫ файҙаланып, һыйырҙар яҡшы ашатылһа, һөт алыу кимәле арта. Яҡшы үләнле көтөүлектәрҙә йөрөтөлгән һыйырҙар һәр бер һауымда 18—25 килограмм һөт алырға мөмкин. Йәйге ософ шулай уҡ малдарҙың организмдарен нығыта, ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлығын арттыра.

Йәш малдар өсөн көтөүлектәр айырыуса мөһим. Тоҡомло йәш малдарҙы көтөүлек шарттарында яҡшы тәрбиәләгәндә генә уңышҡа өлгәшеп була. Шуның өсөн дә йәйге осорҙа иң яҡшы көтөүлектәрҙе йәш малдар өсөн бирергә кәрәк.

Малдарҙы көтөүгә сығарыуға әҙерләү ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Сәнки ҡышҡы осорҙан йәйге осорға күсеүҙә йәшәү һәм туҡланыу шарттары үҙгәрә. Бындай киҫкен үҙгәреш малдарҙың продуктивлеген кәметеүгә һәм ауырыуҙар тыуҙырырға мөмкин. Шуның өсөн һәр бер колхоз һәм совхоз малдарҙы йәйге көтөүлектәргә дөрөҫ күсереүҙе ойошторорға тейештәр.

Көтөүгә сығарыуҙан алда һәр бер фермала ентекле тикшереү үткәрелә. Әгәр ҙә малдар араһында ауырыу һыйырҙар була икән, уларҙы көтөүҙән айырырға кәрәк. Малдарҙың тояҡтарын таҙартырға һәм ундағы артыҡ өлөштәрҙе киҫергә кәрәк. Сәнки көтөүлектәрҙә йөрөтөү ваҡытында малдарҙың тояҡтары тиҙ үҫеүсән була һәм әгәр ҙә уларҙың тояҡтары таҙартып һәм киҫеп торолмаһа, уларҙың аяҡтарының боҙолоп китеүе ихтимал. Шулай уҡ һәҙәк һыйырҙарҙың мөгөҙ остары 1,5—2 сантиметрға бысыла һәм уға ағас шиттәр ҡуйыла. Был башҡа һыйырҙарҙы йәрәхәтләүҙән һаҡлаясаҡ. Һыйыр малдарының йөнөн таҙартырға, уҡраларҙы бөтөрергә кәрәк.

Һарыҡ һәм кәзәләрҙе көтөүгә әҙерләү ҙә шундай уҡ була. Һарыҡтарҙың тояҡтарын таҙартыуҙан тыш, күҙ тирәһендәге һәм ҡойроҡ аҫтындағы йөндәрҙе ҡырҡып ташларға кәрәк. Аттарҙың артҡы аяҡтарындағы дағаларын алдырып ташларға кәңәш ителә. Һуғым йәки егеү өсөн билдәләнгән 1,5 — 2 йәштән өлкән булған үгеҙҙәрҙе һәм шулай уҡ тоҡомһоҙ тәкәләрҙе көтөүгә сығарыуҙан алда бөтерергә кәрәк.

Көтөүлектәргә сығарыу алдынан малдарҙың ауырлыҡтары үлсәнә, көндәлек прогулка арттыра барыла, күберәк ваҡыт уратып алынған асыҡ картәләрҙә тотола. Был да уларҙы көтөү сезонына әҙерләү булып тора.

Малдарҙы көтөүгә иртә сығарырға ярамай. Сәнки еүеш ер тапалыусан була һәм үҫеп килгән йәш үләндәргә ҙур зарар килтерелә. Шуға күрә малдарҙы көтөүлектәргә сығарыу йылы көндәр башланғас, үләндәр кәм тигәндә 12-15 сантиметр үҫкәс кенә башлана.

Ябыҡ малдар көтөүгә 10—12 көнгә һуңлап сығарыла. Йәшел үләнде һаҡлыҡ менән ашатырға кәрәк. Ябыҡ мал йәшел үләнде үтә күп ашаһа, уның ашҡаҙаны боҙола. Шуға күрә уларға бесән йәки һаламдарҙы аҡрынлап йәшел үлән менән аралаштырып ашатырға, аҙыҡ алмашыныуына аҡрынлап күсергә кәрәк. Был аҙыҡтар көтөүгә сығарыу алдынан иртә менән ашатыла. Иртән туҡланып сыҡҡан малдар йәш үләндәргә ҡомһоҙланып ташланмайҙар.

Көтөүгә сығарыу алдынан көтөүлектәр, һыу эсереү һәм мал тороу урындары тикшерелә. Был, малдарҙы ауырыуҙан һаҡлау өсөн кәрәк була. Үлгән малдарҙың һөйәктәрен ситкә алып күмергә, ә һөйәк ятҡан урындарҙы ут менән яндырырға, әҙбиһ йәки карболь шыйыҡсаһы һиберға кәрәк.

Малдар көтөүгә сығарыу алдынан группаларға, көтөүҙәргә бүленә һәм көтөүсегә акт буйынса тапшырыла. Актта һәр бер малдың кличкаһы һәм номеры, ауырлығы, көрлөгө һәм һауылыҡ тороно күрһәтелә. Колхозсыларҙың, совхоз эшселәренең һәм хеҙмәткәрҙәренең үҙ малдарын көтөү өсөн айырым участка билдәләргә кәрәк. Уларҙы общественный малдар менән бер үк көтөүлектәргә йөрөтөргә ярамай.

Көтөүлектәрҙә малдарҙы дөрөҫ йөрөтөүҙе, шулай уҡ көтөүлектәрҙе дөрөҫ файҙаланыуҙы ойоштороп, малдарҙы үҫтереүҙе һәм продуктивлеген күтәреүҙе тәьмин итәйек.

И. Стролюченко,

Башҡортостан малсылыҡ-тәжрибә станцияһының ғилми сотрудниге.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

Н01955. Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тираж 25[illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Кыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө Ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө Ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.
1951 йыл
№ 89 (8806)
8 МАЙ
шишәмбе
хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ЯҢЫ ЗАЕМҒА БЕРҘӘМ ЯҘЫЛЫП, ХЕҘМӘТСӘНДӘР КОММУНИЗМ ТӨҘӨҮ ЭШЕНӘ ВКЛАД ИНДЕРӘЛӘР.

У. Әһлиуллин. — Илебеҙҙе тағы ла ҡеүәтлерәк итеү өсөн (1-се бит).

В. Кирьянов. — Государствоның хәстәрлегенә беҙҙең яуап (1-се бит).

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советенда һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенда (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО: А. Байков. — Партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын ойошҡанлыҡ менән тамамларға (2-се бит).

МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ. — Алдынғы тәжрибәләрҙе киң пропагандаларға (2-се бит).

А. Кондратьев. — Цех партия ойошмаларының ролен күтәрергә (2-се бит).

СӘСЕҮҘЕ ЮҒАРЫ АГРОТЕХНИК КИМӘЛДӘ ҺӘМ ҠЫҪҠА СРОКТА ТАМАМЛАРҒА.

Н. Ғәлимов. — Белокатайҙа агротехниканы тупаҫ боҙалар (3-сө бит).

В. Автономов, С. Мәүлютов. — Совет фәне ҡалаһы (3-сө бит).

Башҡорт АССР-ы колхоздарында яҙғы баҫыу эштәренең барышы (3-сө бит).

М. Ғәлиев. — Мал аҙығы базаһын нығытайыҡ (4-се бит).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауға өлгәшергә

Тыуған илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре больвиктәр партияһы, бөйөк юлбашсыбыҙ ...тәш Сталин етәкселегендә һуғыштан ...ғы биш йыллыҡ планды уңышлы ...п, коммунизм төҙөү эшенә, бөтә донъя... тыныслыҡты нығытыу эшенә үҙҙәре... ҙур вкладтарын индерҙеләр. Был та... ...хи ҙур еңеү республикабыҙҙың эшсе... ...ре, колхозсылары һәм механизаторҙары ...аһында быға тиклем күрелмәгән ҙур ...изводство күтәрелеше тыуҙырҙы. Кол... ...сылар, МТС, совхоз һәм ЛЗС работник... ...ре яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм ...ары агротехник кимәлдә тамамлау, бө... ауыл хужалығы культураларының ...ожайлылығын күтәреү өсөн иң һыҙға... ...п эшләйҙәр.

Республикабыҙҙа быйыл яҙғы сәсеү үҙ... ...н йылға ҡарағанда, айырыуса ыңғай ...рттарҙа үткәрелә. Ваҡ колхоздарҙың ...е хужалыҡтарға берләшеүе, машина... ...рактор паркының техник ҡеүәтенең ар... ...ыуы, Май алды социалистик ярышы ай... ...ның колхозсылар массаһының политик ...ем хеҙмәт күтәрелешенең үҫеүе — бы... ...р бөтәһе лә баҫыу эштәрен ҡыҙыу ...мптар менән алып барыуға мөмкинлек ...рәләр.

Йомағужа районы колхозсылары, меха... ...заторҙары һәм ауыл хужалығы специа... ...стәре социалистик ярышта алған йөк... ...мәләрен намыҫ менән үтәнеләр, респуб... ...кабыҙҙа беренсе булып иртә культура... ...р сәсеүҙе тамамланылар. Улар иртә ...льтураларҙы иң яҡшы агротехник срок... ...рҙа сәсеп, юғары урожай алыуға ыша... ...слы нигеҙ һалдылар. Бер үк ваҡытта ...лхозсылар общественный малсылыҡ өсөн ...ыҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу хәстәрле... ...н дә күрәләр. Колхоздар мал аҙығы сә... ...еү планын да уңышлы үтәнеләр. Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил районы игенселәре лә ...шә көндәрҙә сәсеүҙе тамамлау алдында... ...р. Был райондарҙа сәсеү уҙған йылға ...рағанда байтаҡ иртә һәм яҡшы үткә... ...еле. Хәҙер колхоздар сәсеү һәм май ...ры һереү эштәрен киңдән-киң ҡеҫайтә ...ралар.

Республикабыҙҙың бөтә райондарында ... сәсеүҙе бына шулай иң яҡшы агро... ...ник сроктарҙа үткәреүгә тулы мөм... ...нлектәр бар ине. Ләкин күп кенә ра... ...ондарҙа партия, совет ойошмаларының, ...уыл хужалығы органдарының баҫыу эш... ...рәнә насар етәкселек итеүҙәре, машина... ...рактор паркын һәм эске резервтарҙы ту... ...лыһынса файҙаланмауҙары, механизатор... ...р һәм колхозсылар араһында смена нор... ...ларын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн ...ыҡлы көрәш ойоштормауҙары сәсеүҙе һу... ...ҙыуға килтерҙе. Бигерәк тә Краснокам, Кушнаренко, Байҡыбаш, Федоровка, Мәсет... ...е, Бишбүләк райондары артта ҡалалар. Май айының тәүге яртыһы үтеп бара, ә был райондарҙа әле сәсеү планының хатта ...ртылашы ла үтәлмәгән.

Кушнаренко районы техника менән ҡо... ...ралланыу, йәки кадрҙар менән тәьмин ...телеү яғынан Йомағужа йәки Хәйбулла районынан арттамы ни? Һис юҡ. Кире... ...һенсә, Кушнаренко районы МТС-тары ...хника һәм кадрҙар менән тәьмин ите... ...ү яғынан республикабыҙҙың күп кенә МТС-тарынан өҫтөн торалар. Был район... ...ың колхоздарын йөҙәрләгән ҡеүәтле ма... ...шиналары булған Шәрип, Туҡмаҡлы һәм Кушнаренко МТС-тары хеҙмәтләндерә. Бы... ...нан башҡа колхоздарҙа йәнле тартыу һәм ...шсе көстәре лә етерлек. Районда булған ...ошо бай техниканы һәм резервтарҙы ту... ...лыһынса файҙаланғанда бында көн һайын ...меңләгән гектар майҙанда ашлыҡ сәсеп, ...шулай уҡ инде сәсеү эштәрен тамамлар... ...ға мөмкинлек бар ине. Ләкин район пар... ...тия, совет һәм ауыл хужалығы органда... ...ры, МТС һәм колхоз етәкселәре был мөм... ...кинлектәрҙе файҙаланмай, иң ҡиммәтле ваҡытты ҡулдарынан ысҡындырҙылар һәм шуның менән урожайға ҙур зарар килтерҙеләр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советенең «Республика колхоздарында яровой культуралар сәсеү барышы тураһында-ғы» ошо йылдың 29 апрелдәге ҡарарында Кушнаренко, Борай, Федоровка райондары сәсеүҙе һуҙғандары өсөн ҡаты тәнҡитләнгәйнеләр. Был ҡарар сығыуға хәҙер уң көнгә яҡын ваҡыт үтте. Ләкин көткән һөҙөмтә булманы. Был райондар һаман да артта ҡалыуҙа дауам итәләр. Кушнаренко районы һуңғы биш көнлөктә ни бары 20 процент үҫеш бирҙе. Районлың күпселек колхоздарында иртә культуралар сәсеү планы хатта яртылаш тә үтәлмәгән әле. ВКП(б) райкомы секретарь Бердин, район Советы исполкомы председателе Салыков иптәштәр сәсеүҙең өҙәләүен һәр төрлө объектив сәбәптәр менән аңлатмаҡсы булалар. Ләкин улар был тревоғалы хәлдән сығыу, сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау, бөтә тракторҙарҙы ла тәүлек әйләнәһенә өҙлөкһөҙ эшләтеү, колхоздарҙағы йәнле тартыу көстәрен файҙаланыу сараларын күрмәйҙәр. Улар быйыл да уҙған йылдарҙағы кеүек сәсеүҙе үҙ ағышы менән алып барып, уны май айы аҙаҡтарына тиклем һуҙырға иҫәп тоталар.

Республикабыҙҙа бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеү бик оҙаҡҡа һуҙылған кеүек үк мал аҙығы, майлы һәм техник культуралар сәсеү эштәре лә һаман бик әкрен темп менән барыуҙа дауам итә. Белокатай, Бәҙәәз, Ҡырмыҫҡалы райондарында общественный малдарға аҙыҡ базаһы булдырыу тураһында бөтөнләй хәстәрлек күрмәйҙәр. Был райондар мал аҙығы сәсеү планының өстән бер өлөшөн дә үтәмәгәндәр әле.

Урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының, колхоз, МТС һәм совхоз етәкселәренең бурысы бөртөклө ашлыҡ, шулай уҡ мал аҙығы культураларын сәсеүҙе һис кисекмәҫтән тамамлау өсөн бөтә сараларҙы күреүҙән тора. Ә быға бары тик тракторҙар паркын тулы ҡеүәтендә файҙаланғанда ғына, һәр бер тракторсының һәм һәр бер колхозсының смена нормаһын арттырып үтәүен тәьмин иткәндә генә өлгәшергә мөмкин. Тәнгә сменала тракторҙарҙың юғары етештереүсәнле эшләүе өсөн бөтә сараларҙы күрергә кәрәк. МТС һәм колхоз партия ойошмаларынан икенсе сменала эшләүсе механизаторҙар һәм колхозсылар араһында политик-массовый эш алып барыуға айырыуса серьез иғтибар биреү талап ителә.

Сәсеүҙе отлично сифатлы итеп үткәреү һәм бөтә агротехника ҡағиҙәләрен ныҡлы һаҡлау һәр бер тракторсының һәм колхозсының изге бурысы булып тора. Баҫыу эштәрен яҡшы сифатлы итеп үткәрмәй торон юғары һәм тотороҡло урожай алыу тураһында уйларға ла ярамай. Ләкин күп райондарҙа эштең сифатына тейешле иғтибар бирелмәй. Ҡайһы бер урындарҙа ашлыҡты насар эшкәртелгән тупраҡҡа сәсәләр. Шулай уҡ ерҙе предплужникһыҙ һабандар менән һөрөүгә, ҡул менән сәсеүгә юл ҡуйыу факттары ла бар.

Район ауыл хужалығы бүлектәре, МТС һәм совхоз, колхоз етәкселәре, ауыл хужалығы специалистәре баҫыу эштәренең сифатына ныҡлы контроль булдырырға, теге йәки был сәбәптәргә һылтанып сәсеүҙе һуҙыуға йәки агротехниканы боҙоуға юл ҡуйыусыларҙы — колхоз хоролошона зарар килтереүселәр итеп иҫәпләп, ҡаты яуапҡа тарттырырға тейештәр.

Һәр бер колхоздың һәм совхоздың сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауын тәьмин итеү урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының, шулай уҡ бөтә ауыл хужалығы специалистәренең мактаулы бурысы.

ЯҢЫ ЗАЕМҒА БЕРҘӘМ ЯҘЫЛЫП, ХЕҘМӘТСӘНДӘР КОММУНИЗМ ТӨҘӨҮ ЭШЕНӘ ВКЛАД ИНДЕРӘЛӘР

Республикабыҙҙа яңы заемға яҙылыу ҙур ойошҡанлыҡ менән дауам итә.

Һүрәттә: Өфө ҡалаһындағы Ворошилов исемендәге аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһы коллективенда комсорг члены иптәш А. Бороухин (уртала) подписка алып бара. Закройщица А. Егорова (һулда) һәм контролер М. Калинина (уңда) иптәштәр яңы заемға яҙылалар.

А. Червинский фотоһы.

ЯҢЫ ЗАЕМҒА ЯҘЫЛЫУ УҢЫШЛЫ БАРА

СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы государство заемына яҙылыу республикабыҙ ҡалаларында һәм ауылдарында ҙур уңышлыҡ менән үтә. Хеҙмәтсәндәр һаҡлыҡтарын бер көнлән государствоға үтескә биреп, үҙҙәренең граждандыҡ бурыстарын ҙур шатлыҡ менән үтәйҙәр. Предприятиеларҙа, учреждениеларҙа, колхоздарҙа, совхоздарҙа һәм МТС-тарҙа үткән митингеләрҙә улар большевиктар партияһына, Совет хөкүмәтенә, бөйөк юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ иптәш Сталинға ысын күңелдән бирелгәнлектәрен белдерәләр.

Өфө, Черниковск, Белорет, Ишембай, Октябрьский ҡалаларының, Баймаҡ, Хәйбулла, Бөрйән, Саҡмағош райондарының хеҙмәтсәндәре заемға яҙылыуҙа айырыуса ҙур ойошҡанлыҡ һәм берҙәмлек күрһәтәләр.

Өфө ҡалаһының Ленин, Киров, Жданов, Дим райондарында, Черниковск, Ишембай, Белорет ҡалаларында заемға яҙылыу тәүге көндә үк нигеҙҙә тамамланды. Бында хеҙмәтсәндәрҙең күпселеге 5—6 аҙналыҡ хеҙмәт хаҡтарын ҙур теләк менән государствоға үтескә бирҙеләр.

Хеҙмәтсәндәр заемға берҙәм яҙылыу менән бергә, заем взностарын срогынан алда индереүҙә лә активлек күрһәтәләр. Мәҫәлән, Баймаҡ районында дөйөм подписка суммаһының 61,5 проценте, Хәйбуллала — 36 проценте, Бөрйәндә — 31,2 проценте аҡсалата индерелде.

ИЛЕБЕҘҘЕ ТАҒЫ ЛА ҠЕҮӘТЛЕРӘК ИТЕҮ ӨСӨН

Яңы заем сығарылыу айҡанлы булып үткән күп халыҡлы митингелә Черниковск протез заводы эшселәре һәм инженер-техник работниктәре үҙҙәренең Тыуған илгә, Ленин — Сталин партияһына, һөйөклө Сталинға аҙағына тиклем бирелгәнлектәрен белдерҙеләр.

Митингелә сығып һөйләүсе, заводтың кадрҙар бүлеге начальнигы урынбаҫары иптәш Четина бөтә коллективтең тойғоһон белдереп, былай тине:

— Мин яңы заемға ҙур шатлыҡ менән яҙылам. Минең был аҡсам коммунизмдең гигант төҙөлештәрен тиҙләтеүгә ярҙам итһен.

Унан һуң һүҙ кисеү цехы стахановсыһы иптәш Байморатовҡа бирелде.

— Май алды ярышында, — тине ул, — беҙҙең цех үҙ йөкләмәһен арттырып үтәп, завод күләмендә беренселекте алды. Беҙ заемға яҙылыуҙа ла беренселекте алыу өсөн көрәшәбеҙ.

Иптәш Байморатовты бөтә коллектив ҡайнар яҡланы һәм 5 аҙналыҡ эш хаҡы суммаһына заемға яҙылып, ҙур берҙәмлек күрһәтте.

У. Әһлиуллин,

Черниковск протез заводының партбюро секретаре.

ГОСУДАРСТВОНЫҢ ХӘСТӘРЛЕГЕНӘ БЕҘҘЕҢ ЯУАП

Тәтешле. Яңы заем сығарылыу тураһындағы хәбәр Таныш леспромхозының урман участкаларына һәм һал ағыҙыу пристандәренә бик тиҙ таралды. Бөтә урында ла тантаналы митингелар үтте. Ағас әҙерләүселәр үҙҙәренең сығыштарында Совет державаһының даны һәм көслөлөгө, хеҙмәтсәндәрҙең муд тормошо тураһында хәстәрлек күреүсе большевиктар партияһына һәм иптәш Сталинға тәрән рәхмәт белдерәләр.

Әлибаш поселкаһында митингелә сығып һөйләүсе, леспромхоздың орденле эшсеһе Арслан Вәлиев былай тине:

— Миңә хәҙер 67 йәш. Йәшлек ваҡыттарымды урман промышленностенда эшләп үткәрҙем. Ләкин бер ваҡытта ла тамағым ашҡа туймаһы, өҫтөм кейем күрмәне. Хәҙер мин бәхетле кеше. Балаларым бөтәһе лә уҡыйҙар. Ай һайын 4-әр мең һум хеҙмәт хаҡы алам. Исемем почет таҡтаһында. Беҙҙә намыҫлы эшләгән бөтә кешеләр ҙә шулай рәхәт йәшәйҙәр. Мин шатлыҡ менән яңы заемға яҙылам.

Леспромхоздың Тибельск, Тремовка участкаларында ла заемға яҙылыу ҙур берҙәмлек менән үтте.

В. Кирьянов,

Таныш леспромхозы директоры.

ХАЛЫҠ ЗАЕМЫ

Беҙҙең колхоздың члендәре тыныс ижади тормошто ҡайнар һөйәләр һәм Ватандың экономик ҡеүәтен нығытыу өсөн арымай-талмай эшләйҙәр. Улар колхоз крәҫтиәндәре тураһында Совет государствоһының һәм большевиктар партияһының даими хәстәрлек күреүен яҡшы аңлайҙар. Һәм бына шуға ла СССР Министрҙәр Советенең яңы заем сығарыу тураһындағы ҡарарын бер күңелдән хупланылар. Улар үҙҙәре биргән аҡсаларҙың Ватаныбыҙҙың оборонаһын һәм экономикаһын нығытыуға тотоласағын яҡшы беләләр.

Ватанға бурысҡа аҡса биреп тороу менән бергә, беҙ колхоз баҫыуҙарында быйыл тағы ла мулыраҡ урожай үҫтереү өсөн тырышып эшләйәсәкбеҙ. Беҙ ысын йөрәктән заемға яҙылабыҙ һәм бының менән совет кешеләренең тормошо киләсәктә тағы ла мулыраҡ һәм матурыраҡ булыуын, донъяла тыныслыҡтың тәьмин ителеүен һәм бөйөк халҡыбыҙҙың даһи Сталин етәкселегендә коммунизмға тиҙерәк барыуын теләйбеҙ.

Х. Шәйәхмәтова,

Борай районы, «Һабансы» колхозы председателе, РСФСР Верховный Советы депутаты.

Совет заемдарының популярлеге

Өфө ҡалаһының башҡа промышленность предприятиеларындағы кеүек үк, беҙҙең телефон аппараттары заводы коллективында ла СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең 1951 йыл сығарылышы заемына яҙылыу ғәйәт ҙур политик һәм производство күтәрелеше шарттарында үтте.

Эшселәр нигеҙҙә биш аҙналыҡ эш хаҡтарына яҙылдылар. Смена мастеры, алдынғы производственник иптәш Сатаев государствоға үтескә биш аҙналыҡ эш хаҡын бирҙе. Заводтың алдынғы кешеләре, стахановсы токарь Шакиров, Логинов, Әбҡәдирова, Бикбулатова, Батырғәрәева һәм башҡа бик күп иптәштәр яңы заемға үҙҙәренең биш аҙналыҡ эш хаҡтары күләмендә яҙылдылар.

Завод эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре коммунизмдең гигант ҡоролмалары төҙөлештәрен тиҙләтеү өсөн үҙҙәренең аҡсаларын государствоға ҙур шатлыҡ менән бирәләр.

Ә. Сәйфетдинов,

Заводтың өлкән контролеры.

Шатлыҡлы көндәр

Учалы. (Телефон аша). Район хеҙмәтсәндәре был көндәрҙә айырыуса күтәренкелек менән йәшәйҙәр. 3 майҙа радио яңы заем сығарыу тураһында бөтә илгә шатлыҡлы һәм әһәмиәтле хәбәр таратты. Шул айҡанлы колхоздарҙа, эшселәр поселкаларында митингелар булып үтте. Бәләкәй Учалы, Поляковка поселкаларында йәшәүсе эшселәр, инженер-техник работниктар бер айҙан да кәм булмаған хеҙмәт хаҡына заемға яҙылырға булдылар. Поляковкала үткәрелгән митингелә эшсе иптәш Шуров 130 процент хеҙмәт хаҡына яҙылып, минең был аҡсам тыныслыҡ фронтын артабан нығытыу өсөн булһын, тине. Инженер Ляшко ике айлыҡ хеҙмәт хаҡына яҙылды.

Был митингенан һуң 20 минут эсендә 180 кеше заемға яҙылды.

«Новый путь» колхозы члендәре яҙылған суммаларының 80 процентен срогынан элек индерергә булдылар.

Заемға яҙылыу бигерәк тә, Ахун, Ураз ауыл Советтарында яҡшы бара. Ураз ауыл Советындағы «Урал» колхозы колхозсылары 4 майҙа заемға яҙылып бөттөләр. Колхоз председателе иптәш Бикбаев 1300 һумға яҙылып, аҡсаһын шунда уҡ индерҙе.

М. Хәйҙәров,

(Үҙ хәбәрсебеҙ)

Заемға яҙылыу ойошҡанлыҡ менән үтте

Әлшәй. (Телефон аша). Райондың Булганин исемендәге әрләтелгән ауыл хужалығы артеле члендәре араһында яңы заем уңышлы урынлаштырылды. Колхозсы Ҡәҙиров Әбдрәхман, 85 йәшлек ҡарт колхозсы Әхмәтъянов Ҡиниәғәл иптәштәр 300-әр һумға яҙылдылар һәм шунда уҡ аҡсаларын индереп, яңы заем облигацияларын алдылар.

Был колхоздың колхозсылары 3 май көндө кискә сәғәт 10-ға уҡ 45 мең һумлыҡ заемға яҙылып, 30 мең һумын шунда уҡ аҡсалата индерҙеләр.

Райондың Түбән Әүрәз һәм Яңы Константиновка ауыл Советтарында ла заемға яҙылыу ойошҡанлыҡ менән үтте.

Ғ. Ғәйнетдинова.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Иптәш Сталинға хат

Саратов өлкәһенең нефть һәм газ промышленносе эшселәре, эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, мастерҙары, техниктәре, инженерҙәре һәм хеҙмәткәрҙәре ССР Союзы Министрҙәр Советы Председателе иптәш Иосиф Виссарионович Сталинға хат менән мөрәжәғәт иттеләр.

Коммунизмдең мәһабәт төҙөлештәрен тормошҡа ашырыу тураһында партия һәм хөкүмәттең тарихи ҡарарҙары менән рухланып һәм Тыуған ил алдындағы үҙ бурыстарын аңлап, — тип яҙалар Саратов өлкәһенең нефтселәре, — беҙ 1950 йылда ...йөкләмәләребеҙҙе үтәү өсөн күп көс ...энергия һалдыҡ һәм нефть сығарыуҙың йыллыҡ планын 133,2 процентҡа үтәүгә өлгәштек.

1950 йылғы эш йомғаҡтарын тикшереп, беҙ, файҙаланылмаған бик ҙур резервтар бар әле, тип иҫәпләйбеҙ. Башҡорт АССР-ы һәм Татар АССР-ы нефтселәренең тәжрибәһенә яуап итеп беҙ, Саратов өлкәһенең нефтселәре һәм газсылары 1951 йылғы планды срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылабыҙ. Нефть сығарыуҙың 1950 йылда өлгәшелгән кимәлен 54 процентҡа арттырырға һәм 1951 йылға билдәләнелгән пландан тыш 20 мең тонна нефть бирергә һүҙ бирәбеҙ.

Куйбышев өлкәһенең ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау

1950 йылда арыштан һәм тотош бөртөклө культураларҙан юғары урожай алған һәм бөртөклө культураларҙы ... һәм үлән орлоҡтарын йыйнағанда һәм һуҡҡанда юғары күрһәткестәргә өлгәшкән өсөн СССР Верховный Советы Президиумының Указы менән Куйбышев өлкәһенең ауыл хужалығы алдынғылары ордендәр һәм медалдәр менән наградландылар.

Ленин ордене менән—6 кеше, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордены менән—24 кеше, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» медале менән—57 кеше, һәм «Хеҙмәт отличиеһы өсөн» медале менән — 37 кеше наградланды.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советенда һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенда

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты, республика автогужевой юлдарҙы төҙәтеү һәм капиталь ремонтлау мәсьәләһен ҡарап, 1950—1951 йылдарҙың ҡышҡы осоронда юл эштәре планының урындағы һәм республика юлдарында сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәҫлек хәлдә — ағас сығарыу буйынса—76 процентҡа, ваҡ ҡырсын буйынса — 47,6 процентҡа, таш буйынса — 27 процентҡа, күперҙәрҙе төҙәтеү һәм капиталь ремонтлау буйынса 27 процентҡа үтәлеүен билдәләнеләр.

Күп кенә район Советтары исполкомдары һәм ВКП(б)-ның район комитеттары халыҡ хужалығы өсөн был мөһим эшкә тейешле әһәмиәт бирмәйҙәр һәм юл төҙөү эштәренә ауыл халҡын йәлеп итеү тураһындағы законды ауыл Советтары һәм колхоздар тарафынан үтәүҙе тәьмин итерлек кәрәкле саралар күрмәйҙәр.

Әлшәй, Борай, Дәүләкән, Иглин, Краснокам, Кушнаренко, Мәсетле, Покровка, Салауат һәм Хәйбулла райондарында автогужевой юлдар иҫкергән хәлдә булыуға ҡарамаҫтан, был район Советтары 1950—1951 йылдарҙың ҡышҡы осоронда юл эштәрен айырыуса насар ойоштороҙолар.

1951 йылда юл эштәре планын үтәүҙе тәьмин итеү һәм республиканың төп юлдарын иген йыйнау башланғанға тиклем автотранспорт өсөн нормаль — үтеү хәленә килтереү маҡсатында, Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы ҡарар итте:

1951 йылдың 10 майынан алып 10 июненә тиклем юл төҙөү буйынса айлыҡ иғлан итергә.

Райондарға айлыҡ осоро өсөн юл эштәре заданиеһен раҫларға.

Район Советтарының исполкомдары һәм ВКП(б) район комитеттары мәжбүр ителде:

а) һәр бер ауыл Советы һәм колхоз буйынса эш графигы төҙөргә һәм раҫларға, айлыҡ башланғас баҫыу эштәренән буш булған ауыл халҡының һәм колхоздарҙағы транспорттың массовый рәүештә юл эштәренә сығыуын тәьмин итергә һәм юл эштәре буйынса айлыҡҡа бирелгән заданиене һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итергә, шуның менән бергә, колхоздарҙың һәм колхозсыларҙың 1949 һәм 1950 йылдарҙа хеҙмәт көндәренең үтәлмәгән өлөшөн тулыһынса файҙаланырға;

б) район Советтары исполкомдарының ултырыштарында колхоздар араһындағы юлдарҙы һәм күперҙәрҙе ремонтлау һәм уларҙы үтеп йөрөрлөк хәлгә килтереү эштәре графигын раҫларға;

в) халыҡ хужалығы өсөн юлдарҙың әһәмиәтен киң рәүештә аңлатып, халыҡ араһында массовый-политик эште йәйелдерергә һәм айлыҡ осоронда йыллыҡ эштәр планын тамамлау өсөн социалистик ярыш ойоштороорға;

г) эш урындарында эшселәргә лекциялар һәм докладтар һөйләү өсөн агитбригадалар һәм социалистик ярыш барышы күрһәткестәренең күсмә таҡталарын ойоштороорға;

д) колхоздарҙа даими юл ремонтлау бригадалары ойоштороорға, уларҙы төп автогужевой юлдарҙағы эшкә беркетергә.

Район һәм ҡала Советтары исполкомдары һәм ВКП(б)-ның район һәм ҡала комитеттары һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы эргәһендәге юл Управлениеһе (иптәш Кузнецов) Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының 1951 йылдың 12 мартындағы 178-се номерлы ҡарарына ярашлы рәүештә айлыҡ осоронда промышленность, транспорт һәм сауҙа предприятиеларының, ойошмаларының һәм учреждениеларының йөк машиналарын юл участкаларына юл материалдары сығарыуға йәлеп итеүгә мәжбүр ителде.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы эргәһендәге юл Управлениеһе (иптәш Кузнецов), район Советтары исполкомдары, ВКП(б)-ның район комитеттары айлыҡ ваҡытында республика әһәмиәтендәге юлдарға айырыуса иғтибар итеүҙе мәжбүр итергә, бының өсөн хеҙмәткә ҡатнашлыҡ итеү иҫәбенән гужевой транспортты һәм эшсе көсөн йәлеп итергә мәжбүр ителде.

Государство имендәлеге министерствоһының милиция Управлениеһе Госавтоинспекцияһы (иптәш Разуваев) юл Управлениеһенә һәм ҡала Советтары исполкомдарына предприятиеларҙың һәм ойошмаларҙың йөк автомашиналарын айлыҡ осоронда юл төҙөү эшенә йәлеп итеү буйынса практик ярҙам күрһәтергә мәжбүр ителде.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы эргәһендәге юл Управлениеһе (иптәш Кузнецов) һәр декадала юл төҙөү буйынса заданиеның һәм айлыҡ осоронда 1951 йылдың юл эштәре планы үтәлештәренең барышы тураһында Министрҙәр Советына һәм ВКП(б) Өлкә Комитетына информация биреп торорға мәжбүр ителде.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын ойошҡанлыҡ менән тамамларға

Большевиктар партияһы һәм иптәш Сталин коммунистарға марксистик-ленинсе тәрбиә биреү тураһында арымай-талмай хәстәрлек күрәләр. «Марксистик-ленинсе теорияға эйә булған партия ғына ышаныслы рәүештә алға бара ала һәм эшселәр синыфын алға алып бара ала», — тип өйрәтә иптәш Сталин.

Коммунистарҙың һәм партияһыҙ активтең уҡыуы өсөн беҙҙә бөтә шарттар бар. Ағымдағы уҡыу йылында республикабыҙҙа «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы» өйрәнеү буйынса 3012 түңәрәк, И. В. Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 741 түңәрәк, 1.676 политик мәктәп эшләне. Бынан тыш, 21 меңдән күберәк коммунист марксистик-ленинсе теорияны үҙ алдына өйрәнә.

Быйылғы уҡыу йылында партия ойошмаларының күбеһе партия мәғарифе селтәренең эшенә конкрет һәм көндәлек етәкселек итәләр. Был иһә уҡыусыларҙың сифатын күтәреүгә, мәктәптәрҙең һәм түңәрәктәрҙең уҡыу пландарын үтәүҙәренә, тыңлаусыларҙың өйрәнелгән мәсьәләләрҙе яҡшы үҙләштереүҙәренә өлгәшергә мөмкинлек бирҙе.

Ләкин айырым райондарҙа политик мәктәп һәм түңәрәктәрҙең эше, коммунистарҙың политик уҡыуҙары үҙ ағышына ҡуйылыуын билдәләп үтергә кәрәк. Мәҫәлән, Благовар һәм Мәләүез райондарында шулай булды. Һөҙөмтәлә был райондарҙа политик мәктәп һәм түңәрәктәрҙең күбеһе уҡыу пландарын үтәмәнеләр. Партия мәғарифенә етәкселек итеүҙә башҡа райондарҙа ла етешһеҙлектәр бар. Күптән түгел булып үткән партия конференцияларында делегаттар коммунистарҙың политик уҡыуҙарын ойоштороуҙағы сериоз етешһеҙлектәрҙе бик ныҡ тәнҡитләнеләр. Баҙаяҙ һәм Ҡандра район партия ойошмаларының конференцияларында райкомдың агитация һәм пропаганда бүлектәренең партия мәғарифе селтәренең эшенә йомшаҡ етәкселек итеүҙәре күрһәтелеп үтелде.

Партия мәғарифе системаһында уҡыу йылы тамамланып килә. Үткән йылдың тәжрибәһе уҡыу йылын ауыл ерҙәрендә май аҙағында, ҡалаларҙа — июнь аҙағында тамамлауҙың маҡсатҡа ярашлы булыуын күрһәтте.

Бурыс — уҡыу йылын яҡшы әҙерлек һәм ойошҡанлыҡ менән тамамлауҙан тора. Уҡыу йылын тамамлауға әҙерлек көндәрендә партия мәғарифенең эшенә иғтибарҙы айырыуса көсәйтергә һәм политик уҡыуҙың сифатын артабан күтәрергә һәм йомғаҡлау занятиеларының юғары кимәлдә үтеүен тәьмин итергә кәрәк.

*Шуның менән бергә, уҡыу программа*һын үтеүҙе ашығыуға, материалдарҙы формаль рәүештә генә өйрәнеүгә һис тә юл ҡуйырға ярамай. Хәҙер үк инде айырым дүртәр сәғәтлек икешәр занятие үткәреү ваҡиғалары бар. Билдәле, былай ашығыу уҡыуҙың сифатына, идея йөкмәткеһенә ҙур зарар килтерә.

Уҡыуҙы ваҡытынан алда тамамларға ла ярамай. Ә ҡайһы бер урындарҙа сәсеү ваҡытында политик мәктәп һәм түңәрәктәрҙең эшен туҡтатыуға маташыуҙар бар.

Уҡыу йылын тамамлауға әҙерләнгәндә бөтә политик мәктәп һәм түңәрәктәрҙең дә эштәрен тамамлау срогын бергәй үк итеп билдәләүҙе булдырмаҫҡа кәрәк. Партия ойошмалары һәр бер политик мәктәп һәм түңәрәктең эше менән ныҡлап танышырға, уҡыу планының үтәлешен иҫәпкә алып, уларҙың һәр береһе өсөн занятиеларҙы тамамлауҙың дифференциаль срогын билдәләргә, тыңлаусыларҙың һәм пропагандистарҙың нинди ярҙамға мохтаж булыуҙарын асыҡларға һәм был ярҙамды ойошторорға тейештәр. Пропагандистар менән йомғаҡлау занятиеларын үткәреү планы һәм методикаһы мәсьәләләрен асыҡларға кәрәк.

Йомғаҡлау занятиелары тыңлаусыларҙың белемдәрен тикшерергә һәм нығытырға, политик уҡыу өсөн коммунистарҙың яуаплылыҡтарын күтәрергә, яңы уҡыу йылында һәр бер коммунистең ҡайҙа уҡыуын билдәләргә саҡырылғандар. Шуның менән бергә был занятиелар пропагандиска үҙ эшенә тәнҡит күҙенән сығып анализ яһарға, етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алырға һәм шуға нигеҙҙә үҙенең пропагандистлыҡ оҫталығын тағы ла юғары күтәрергә мөмкинлек бирәсәк.

Йомғаҡлау занятиеларының уңышы күп дәрәжәлә уларға пропагандистарҙың да, шулай уҡ тыңлаусыларҙың да ентекләп әҙерләнеүҙәренә бәйләнгән. Тыңлаусыларға программаны үтеүҙең тамамланыуын көтөп тормайынса өйрәнелгән материалды ҡабатлай башларға кәңәш бирергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта ҡабатлауҙы үҙ ағышына ҡуйырға ярамай. Пропагандистар тыңлаусылар өсөн индивидуаль һәм группалы консультациялар ойошторорға тейештәр. Артта ҡалыусы һәм занятиеларҙа һирәк булған тыңлаусыларға айырым иғтибар бирергә һәм йомғаҡлау занятиеларына әҙерләнеүҙә уларға ярҙам итергә кәрәк.

Йомғаҡлау занятиелары, уларҙы методик яҡтан дөрөҫ ойошторғанда ғына яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Йомғаҡлау занятиеларын киң йәйелдерелгән беседа формаһында, уҡыу йылының барышында өйрәнелгән мәсьәләләрҙе эҙмә-эҙлектә тикше- [illegible]

[illegible] үткәрергә, ә мөмкин булған урында айырым темалар һәм марксизм-ленинизм классиктарының айырым әҫәрҙәре буйынса уларҙы бергә йыйып теоретик беседалар ойошторорға кәрәк.

А. Бәйкова.

ВКП(б) Өлкә Комитетының пропаганда бүлеге мөдиренең урынбаҫары.

Партбюро агитацион эшкә конкрет етәкселек итә

Түбән Троицк буҫтау фабрикаһының партия ойошмаһы агитаторҙар менән эшләүгә ҙур әһәмиәт бирә. Агитаторҙарҙың эшселәр араһында юғары идеялы һәм тәьҫирле беседалар үткәреүҙәренә ирешергә тырыша. Был маҡсатта агитаторҙар өсөн регуляр рәүештә семинарҙар, алдынғы тәжрибәләрҙе уртаҡлашыу буйынса кәңәшмәләр ойошторола.

1951 йылда агитаторҙар өсөн бөтәһе 11 семинар һәм кәңәшмә үткәрелде. Семинарҙар һәм кәңәшмәләр аҙнаға бер тапҡыр, ә участкаларҙа һәм цехтарҙа беседалар ике тапҡыр үткәрелә. Бынан башҡа, беҙ заводтың ҡыҙыл мөйөшөндә аҙнаға бер тапҡыр лекция уҡыу, доклад-тар үткәреү практикаһын ҡулланабыҙ.

Биндәле булғанынса, агитаторҙар бөтә ғүмәл өлгө булырға, инициатива күрһәтергә тейештәр. Партия ойошмаһы бындай агитаторҙарҙы тәрбиәләү буйынса күп эш башҡарҙы. Хәҙер беҙҙә бындай агитаторҙар күп. Мәҫәлән, иптәш Непляеваны алайыҡ. *Ул — туҡыусы. Ковалев* методын өйрәнеп һәм уны производствоға индереп, заданиеһен һәр ваҡыт арттырып үтәй. *Комплекслы эш алымдарын* башҡа эшселәрҙе лә өйрәтеү өсөн ул үҙ сменаһында инструктор итеп билдәләнде. Иптәш Непляева производство процестарын туҡыусыларға һөйләгәндә, бер үк ваҡытта агитацион эште лә онотманы. Уларҙы ижади хеҙмәткә рухландырҙы һәм 13 туҡыусыны комплекслы эш алымын ҡулланып эшләүгә өйрәтте. Шулай уҡ агитаторҙар Дробина, Цыганкова һәм башҡа иптәштәрҙең дә участкаларында агитмассовый эш яҡшы ҡуйылған. Һөҙөмтәлә улар ай һайын планды 115 — 120 процентҡа үтәйҙәр.

Беҙҙең агитаторҙар үҙҙәренең эштәрендә газета материалдарын һәм «Агитатор блокнотын» йыш ҡулланалар. Күргәҙмә пособиелар, стена газетаһы, молниялар, боевой листоктар һәм башҡа шундай агитацияның төрлө формаларын ҡулланыу беҙгә бик ҙур файҙа бирә, коллективты фиҙакәр хеҙмәткә йүнәлдерә. 1951 йылдың I кварталында агитацион эштең яҡшы ҡуйылыуы һөҙөмтәһендә, пландан тыш 54 мең 600 метр продукция етештерҙек. Хәҙер нормаһын үтәмәгән бер генә эшсе лә юҡ. *Былар бөтәһе лә агитацион* эштә тейешле кимәлгә ҡуйыуҙың һөҙөмтәләре.

Мин үҙем ен иләү цехында агитатор булып эшләйем. Агитаторлыҡ эшемде мин эш көнө тамамланғандан һуң алып барам. Бының өсөн 25—30 минут ваҡыт талап ителә. Минә эшселәр йыш ҡына төрлө һорауҙар менән мөрәжәғәт итәләр. Мин уларға һәр ваҡыт тулы һәм ҡәнәғәтләнерлек яуап бирергә һәм ярҙам итергә тырышам.

Ләкин агитколлектив һәм партбюро эшендә ҙур ғына етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Ҡайһы бер агитаторҙар семинарҙарҙа, кәңәшмәләрҙә булмайҙар, шунлыҡтан улар беседаларҙы тейешле кимәлдә үткәрмәйҙәр. Ә партбюро быға контроль алып бармай. Агитаторҙар араһында эш тәжрибәләре менән уртаҡлашыу семинарҙары ла етерлек үткәрелмәй.

Беҙ үҙебеҙҙең большевистик һәм агитацион һүҙебеҙ менән коллективты производство планын срогынан алда үтәү өсөн фиҙакәр хеҙмәткә йүнәлдерергә тейешбеҙ.

И. Мавратин.

Түбән Троицк буҫтау фабрикаһының *агитаторы.*

Бөйөк даһиға биргән вәғәҙәне үтәп

[illegible]

М. Тимербулатов,

есенсе номерле промысла операторы.

Мастер Сидоренко рекорды

Октябрьский. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Социалистик ярышта «Туймазыбурнефть» трестының 1-се номерле бораулау конторыһы коллективы ҙур уңыштарға өлгәште. Бораулаусылар тиҙләтелгән режимде киң ҡулландылар. Улар бығаса күрелмәгән күрһәткестәр бирҙе.

Социалистик Хеҙмәт Геройы И. Куприянов һәм атаҡлы бораулау мастеры Ҡ. Беляндинов иптәштәрҙең тәжрибәләрен ныҡ үҙләштереп, бораулау мастеры иптәш Сидоренко яңы рекорд ҡуйҙы. Ул, 137-се номерле скважинаны 1234 метр тәрәнлеккә девон нефтенә бораулап, мастер Ҡ. Беляндиновтың быға тиклем алғашҡан тиҙлегенән 11 метрға юғары булған тиҙлекте — станок-айға 1150 метр тиҙлек бирҙе.

Малдар өсөн стандарт торлаҡтар

Мраҡ. Быйыл райондың эреләтелгән колхоздарында мөгөҙлө эре малдар өсөн 21, йылҡы малдарына 10, һарыҡ-кәзәләргә 19 яңы стандарт типтағы торлаҡтар төҙөләсәк.

Был төҙөлештәр өсөн район колхоздары 14400 кубометрҙан артығыраҡ ағас материалдары әҙерләп, ағастарҙы һыу менән ағыҙып алып килеү һәм ташыу эштәрен башланылар. Унан һуң кирбес, таш һәм башҡа төрлө төҙөлеш материалдарын әҙерләү саралары күрелә.

Был эштәрҙе уңышлы тамамлау өсөн Сталин, Куйбышев исемендәге һәм «Авангард» колхоздары махсус төҙөү бригадалары ойошторҙолар. Улар төҙөү эшен башланылар ҙа инде. **Х. Дәүләтшин.**

Май пары һөрөү тамамланды

Ҡандра. Беренсе Май исемендәге совхоз (директоры иптәш Самойленко, партия ойошмаһы секретары иптәш Тәхфәтуллин) ирте культуралар һәм тамыр аҙыҡтар сәсеү планын ҡыҫҡа срокта үтәне. Барлыһы 1880 гектар ашлыҡ сәселде. Шунан 1050 гектары арҡыры-буй ысулда башҡарылды.

Совхоз трактористары Фокин, Агафонов һәм Пантелеев иптәштәр көн һайын 45 гектар урынына 100—110 гектар ашлыҡ сәстеләр. Шуның менән бергә улар экономия яһалған ярыулыҡ иҫәбенә 2 көн эшләнеләр.

Совхозда шулай уҡ 5 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосаһы ултыртылды. Совхоз механизаторҙары май пары һөрөүҙе лә тамамланылар.

Р. Сайфетдинов.

МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ

Алдынғы тәжрибәләрҙе киң пропагандаларға

Алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалау — район газеталарының мөһим бурысы. Газета алдынғы методтарҙы производствоға индереү өсөн көрәшеүсе булырға тейеш.

«Коммунизмға» газетаһында бына ошо сифат етешмәй. Дөрөҫ, Ҡыйғы район газетаһы алдынғылар тураһында яҙа. Ул общественный малсылыҡ работниктарының, механизаторҙарҙың хеҙмәт өлгәшеүҙәре тураһында йыш ҡына информацион характерҙа хәбәрҙәр ҙә бирә. Ләкин был хәбәрҙәрҙең йөкмәткеһе күрһәткес һандарҙан, айырым факттарҙы ғына күрһәтеүҙән ары китмәй.

Газетаның редакцияһы, ваҡ колхоздарҙы эрелеткәндән һуң, уларҙы ойоштороу-хужалыҡ ярыйнан нығытыуға айырыуса иғтибар итергә кәрәклеген дә хәтерҙән сығара. Ул эрелетелгән колхоздарҙың фән нигеҙендә үҫеүе алдынғы тәжрибәләрен дөйөмләштереү һәм таратыу мәсьәләләре менән бөтөнләй тип әйтерлек шөғөлләнмәй. Өс ай буйына газетала эрелетелгән хужалыҡтарҙың перспектив пландары, алдағы көндәре тураһында һөйләгән бер генә мәҡәлә лә баҫылмаған.

Был эрелетелгән колхоздарҙың тәүге партия ойошмаларында партия-политик эште ойоштороу мәсьәләләре һәм күп кенә баҫыусылыҡ бригадаларында, малсылыҡ фермаларында төҙөлгән партия группаларының ыңғай эш өлгөләре лә газета биттәрендә яҡтыртылмай. Йыл башынан бирле газетала эрелетелгән колхоздарҙың хужалығында айырым тармаҡтар менән етәкселек итеү тәжрибәләре, малдарҙың тоҡомон яҡшыртыу практикаһын дөйөмләштергән мәҡәләләр бер генә тапҡыр ҙа урынлаштырылмаған.

Газетала баҫылған күпселек материалдарҙың сифаты уҡыусыларҙы ҡәнәғәтләндерерлек түгел. Сөнки алдынғыларҙың эше тураһында яҙғанда редакция работниктары тик һандар күрһәткесе, кампания йомғаҡтары менән генә сикләнәләр. Ә уңыштарға өлгәшеүҙең юлдары күрһәтелмәй һәм аңы эш методтары яҡтыртылмай, факттарҙы дөйөмләштереү нигеҙендә һығымталар яһалмай.

Миҫал итеп газетаның 1951 йыл, 31 ғинуарҙа сыҡҡан «Общественный малсылыҡтың ҡеүәтле күтәрелеше өсөн» тигән мәҡәләһен алырға мөмкин. Мәҡәләлә алдынғы һәм артта ҡалған колхоздарҙың планды үтәүе йәки үтәмәүе тураһында ғына һөйләнә, ә алдынғыларҙың эш тәжрибәләре яҙылмай. Автор Ленин исемендәге эрелетелгән ауыл хужалығы артеленең йылҡысылыҡтағы өлгәшеүҙәрен маҡтап, Социалистик Хеҙмәт Геройы Солтан Ғирфанов етәкселегендәге КТФ-ның эш һөҙөмтәләрен күреп һоҡлана. Ләкин алдынғыларҙың йылҡысылыҡты үҫтереүҙә нисек эшләүҙәре, бындай уңыштарға өлгәшеү өсөн нисек көрәшеүҙәре хаҡында өндәшмәй.

Аҙаҡтан ошо уҡ мәҡәләлә колхоз етәкселәре һәм малсылыҡ *работниктары* алдына шундай бурыс ҡуйыла:

«Малдарҙы... ашатыу, эсереү, тәрбиәләү эштәрен яҡшыртып, общественный малсылыҡты үҫтереү, уның продуктивлеген ... нығыраҡ бирелеш яһарға ...

Малдарҙың продуктивлеген ... өлгәшеү өсөн хеҙмәтте нисек ... ға кәрәк? Бының өсөн малсылыҡ ... никтары һәм колхоз етәкселәре ... методтар менән эшләргә тейештәр ... ләлә бына ошо мөһим һорауға ... юҡ.

Газетаның 5 февралдә сыҡҡан ... рендә «Тракторҙарҙы ремонтлауҙа агрегат-узел методы ҡулланыла» тигән ... баҫылған. Ул да информацион ... генә яҙылған. Был хәбәрҙә ... методы Өбҙәҙәк МТС-ының ... бригадаһы төҙәлеүенә генә ... ҡалдырыла. Өс бригада төрлө ... эште ике сменала ойошторҙо ... шул арҡала смена заданиеларын ... үтәлә. Газета бригада-узел ... ханизаторҙарға бына шулай ... нән генә сикләнә.

Бригада-узел методы буйынса ... заторҙарҙың хеҙмәте нисек ойош... Бындай методтың өҫтөнлөгө ... ра, ремонтсылар бөтә резерв... ланалармы? — былар тураһында бер генә һүҙ ҙә юҡ. Редакция ... активы менән тығыҙ бәйләнеш ... мәй, механизаторҙарҙың алдынғы ... тәжрибәләрен өйрәнмәй. Ошо ... зетаның материалдары йөкмәтке... бик ярлы һәм бер яҡлы ғына ...

28 февралдә баҫылған «Му... өсөн» тигән хәбәр ҙә шундай уҡ ... һеҙлектәрҙән арынмаған. Тимирязев ... мендәге эрелетелгән орденлы ... ғы быйыл ҡышҡы агротехника ... планын уңышлы үтәгән. Колхоз ... дателе иптәш Закиров үҙе етәк... башлаған ваҡыттан алып алдынғы ... техниканы колхоз производство... ның индерә. Уның етәкселеге ... гендә башҡаларға өлгө булырлыҡ ... уңыштар бар. Ә газета ... етәкселектең стилен күрһәт... Ойоштороу эшенең тәжрибәләрен ... маған.

Колхозсыларҙың хеҙмәтен ... тороу, баҫыусылыҡ һәм трактор ... даларының тығыҙ бәйләнешен ... тәьмин итеү — былар бөтәһе ... ләр менән эшләү тигән һүҙ. ... бер эштең уңышы — хеҙмәтте ... ойоштора белеү хәл итә. Тик ... генә, уларҙың ижади хеҙмәте, ... маҡсатҡа йүнәлешле ... генә хеҙмәттә яңы еңеүҙәргә ... Ҡыйғы районы газетаһы (редактор иптәш Валиев) алдынғы тәжрибәләр турағында яҙғанда, тәжрибәләрҙе ... сә кешеләр турағында онота.

«Коммунизмға» газетаһының ... алдынғы тәжрибәләрҙе пропаганда... ғы ошо сериоз етешһеҙлектәрҙе ... ҙән тора. Был газетаның ... *газетаның редакцияһының* ... ҙың тәжрибәләрен ... тергән һәм төрөп йөкмәткеле ... кәтәләр.

„Кыҙыл Башкортостан" материалдары буйынса

„Ни өсөн план үтәлмәй?"

Ошондай исем менән «Кыҙыл Башкортостан» газетаһының 52-се номерендә Архангель леспромхозының Берш-тамаҡ урман участкаһында эшселәр араһында хеҙмәттең дөрөҫ ойошторолмауы, улар өсөн тейешле тормош шарттары тыуҙырылмауы, иҫәп-хисап эшендә контроль булмауы, участкала политик-массовый эшкә ныҡлы әһәмиәт бирелмәүе турағында хәбәр баҫылғайны.

Газетала баҫылған был хәбәр ... хоздың партия ойошмаһы йыйылышында тикшерелде һәм ағас әҙерләүҙәге ... тоткарлыҡты бөтөрөүгә ҡарата ... ның Архангель район комитеты тарафынан конкрет саралар билдәләнгән.

Үҙенә йөкмәтелгән эшкә яуаплы ... ғаны өсөн Берш-тамаҡ урман участкаһы начальнигы Кулаков эшенән бушатыл...

Цех партия ойошмаларының ролен күтәрергә

Производство пландарын уңышлы үтәү өсөн көрәштә цех партия ойошмаларының ролдәре бик ҙур. Улар цех һәм бүлектәр менән яҡындан етәкселек итәләр. Үҙ участкаһындағы көндәлек тормош нәжигәләры менән бергә йәшәйҙәр. Һәр бер коммунистең, шулай уҡ партияһыҙ активтең ыңғай һәм етешһеҙ яҡтары уларға асыҡ билдәле. Улар өсөн производствола булған бөтә ыңлыҡтарҙы тиҙ генә тотоп алырға һәм массалаштырырға ҙур мөмкинлектәр бар.

Беҙҙең кийе-мамыҡ комбинатында 5 цехта партия ойошмаһы бар. Уларға производство пландарының һәм заданиеларының үтәлешен хәл итеү эше йөкмәтелгән. Цех партия ойошмалары был почетлы бурыстарҙы уңышлы үтәй алһын өсөн комбинат партия бюроһы уларҙың эштәренә яҡындан ярҙам итеп килә: партбюро секретарҙарына инструктаждар бирә һәм уларҙың кәңәшмәләрен үткәрә. Комбинат партия бюроһының члендары айырым цех партия ойошмаларына беркетелгәндәр. Улар урында политик-массовый эштәрҙе ойоштороу, партия йыйылыштарын юғары политик кимәлдә үткәреү буйынса практик ярҙам күрһәтәләр.

Комбинат партия бюроһының практик ярҙамы арҡаһында цех партия ойошмаларының политик-массовый эштәрҙе байтаҡ яҡшыртыуға өлгәштеләр. Шул уҡ ваҡытта партия ойошмалары техник пропагандала һәм производство мәсьәләләре менән дә шөғөлләнә башланылар.

Миҫал өсөн иләү фабрикаһының партия ойошмаһын алырға була. Фабрикала инженер Ковалев методын таратыу алдынан ҡайһы бер инженер-техник работниктар хата фекер йөрөтәләр ине. Улар, Ковалев методын эшселәргә өйрәтеү менән махсус инструкторҙар шөғөлләнергә тейеш, тинеләр. Партия бюроһы бындай хата ҡараштың үҙ ваҡытында һиҙеп ҡалды һәм мәсьәләне цех партия ойошмаһының асыҡ йыйылышына ҡуйып тикшерҙе. Бында цех начальниктары Адамчук һәм Моратов иптәштәрҙең производствоны камиллаштыреү турағында докладтары тыңланды.

Йыйылыш коммунистарҙың һәм партияһыҙ активтың ҡатнашлығында үтте. Иптәш Ковалевтың стахановсы эш методын өйрәнеүҙе яҡшыртыуға йүнәлдерелгән конкрет саралар билдәләнде. Агитаторҙар был мәсьәлә буйынса эшселәр менән беседа үткәрҙеләр. Иптәш Ковалев методының государство әһәмиәтенә эйә булғанын конкрет факттарға нигеҙләп аңлаттылар.

Иптәш Ковалев методын өйрәнеүгә арналған стена газетаһы һәм боевой листоктар сығарылды. Һөҙөмтәлә 196 кеше иптәш Ковалевтың стахановсы эш методтарын яҡшы үҙләштерҙе.

Партия ойошмаһының ойоштороу-массовый эштәрҙе эҙмә-эҙлекле алып барыуы һәм социалистик ярыш менән етәкселек итеүе арҡаһында иләү фабрикаһы коллективы 1950 йылда комбинат буйынса беренсе урынды алыуға өлгәште, һөҙөмтәлә 21 тонна мамыҡҡа экономия яһаны һәм пландан тыш 1319 мең һум файҙа алды. Был коллектив 1951 йылда ла өлгәшкән уңыштарын ҡулдан ысҡындырмай — комбинаттың күсмә Ҡыҙыл Байрағын тотоп килә. Фабрикала эш нормаһын үтәмәгән кеше юҡ. Коммунистар производствола авангардлыҡ күрһәтәләр. Әхмәтов, Сергеев, Әминев, Колобкова, Гимкаев, Ихсанов, Куткина һәм Трофимова иптәштәр иң алдынғы стахановсыларҙан һаналалар.

Бөтә коммунистар ҙа партия уҡыуына ылыҡтырылғандар һәм уларҙың партия поручениелары бар. Цех партия ойошмаларының йыйылыштарында партия поручениеларының үтәлештәре турағында коммунистарҙың докладтары, производство пландарының үтәлеше һәм хеҙмәтте стахановса ойоштороу турағында цех, бүлек начальниктарының информациялары тыңлана, эште артабан яҡшыртыу саралары билдәләнә.

Кешеләр менән йәнле бәйләнештә булыу, уларҙы политик тәрбиәләү беҙҙең цех партия ойошмаларының эшендә нигеҙ мәсьәлә булып тора. Цехтарҙың, шулай уҡ бүлектәрҙең һәр бер сменаһында агитаторҙар бар. Улар комбинат коллективы алдына партия һәм хөкүмәт тарафынан ҡуйылған мөһим бурыстарҙы, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренең әһәмиәтен һәр бер эшсегә аңлаталар, халыҡ-ара хәл менән таныштыралар. Агитаторҙарҙан Сергеев, Әхмәтов, Мамонов һәм байтаҡ ҡына башҡа иптәштәр эшселәр менән беседаны айырыуса ҡыҙыҡлы итеп ойошторалар.

Партия ойошмаларында булып үткән отчет-һайлау йыйылыштары Казаков, Кулябин, Шайхетдинов, Комендантов һәм башҡа коммунистарҙың комбинат йәки цех партия бюроһы члены булып та эштә активлыҡ һәм инициатива күрһәтмәгәнлектәрен асты. Билдәле, коммунистарҙың ышаныстарын аҡлай алмаған был иптәштәр яңы составҡа һайланманылар. Шуға күрә лә комбинат партия бюроһы булған хаталарҙы төҙәтеү маҡсатында партия бюроһы члендарының активлығын һәм инициативаһын күтәреү сараһын күрә.

Туҡыу фабрикаһының партбюро секретары иптәш Крючков производство уңыштары менән мауыға башлағайны. Уның айырым коммунистарҙың эшендәге сифатһыҙ етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алмауы һиҙелде. Һөҙөмтәлә яңы сорт туҡыманы үҙләштереүҙә һәм производство планын үтәүҙә эске резервтар ҡәнәғәтләнерлек файҙаланылманы.

Комбинат партия бюроһы был етешһеҙлеккә үҙ ваҡытында иғтибар итте һәм үҙенең ултырышында партия ойошмаһының эше турағында иптәш Крючковтың отчетын тыңланы. Бында иптәш Крючковтың хата ҡараштарын күрһәтеү менән бергә партия ойошмаһының етәкселек ролен күтәреү турағында практик саралар билдәләнде. Иптәш Крючков комбинат партия бюроһының ҡарарын цех партия ойошмаһының йыйылышында өйрәнеүҙе ойошторҙо. Коммунистар эште яҡшыртыу турағында конкрет тәҡдимдәр индерҙеләр. Был сараларҙан һуң фабрика яҡшы эшләй башланы һәм яңы сорт туҡыманы үҙләштерҙе.

Шуны ла әйтергә кәрәк, отчет-һайлау йыйылыштарында партия бюроһына йәш кадрҙар һайланды. Уларҙың партия эшендә тәжрибәләре юҡ, шуның өсөн дә даими инструктаж биреп тороуҙы талап итәләр. Быны иҫкә алып, комбинат партия бюроһы улар менән айға бер тапҡыр партия эшенең практикаһы турағында семинар үткәреп килә. Шулай уҡ ике-өс айға бер тәжрибә алышыу кәңәшмәләре үткәрелә.

Цех партия ойошмалары менән етәкселек итеү эшендә беҙҙә бик ҙур етешһеҙлектәр бар әле. Ҡайһы бер цех партия ойошмаларының, бигерәк тә туҡыу фабрикаһы партия ойошмаһының активлеге етерлек түгел, производство тормошоноң бөтә деталдәренә инмәй, етешһеҙлектәргә һуңлап иғтибар бирә, эшселәрҙе политик яҡтан тәрбиәләү эше менән йомшаҡ шөғөлләнә. Бында комбинат партия бюроһының ғына түгел, ВКП(б)-ның Жданов район комитетының да ғәйебе бар. Сөнки ул цех партия ойошмаларының эштәре менән ҡыҙыҡһынмай. Райком работниктары ... натта булған саҡта, комбинат партия секретары кабинетынан ары үтмәйҙәр, ... кретарҙар һәм коммунистар менән ... үткәрмәйҙәр. Һуңғы 7 айҙа улар ... партия ойошмаларының эше ... ҙыҡһынғандары ла юҡ. Райком ... тия ойошмалары секретарҙарының ... ға бер генә тапҡыр булһа ла ... рен, семинарҙарын үткәрһә, уларҙың ... эшен ойоштороуҙа ҙур ярҙам булыр ...

1950 йылдың июнь айында ВКП(б) Жданов район комитеты бюроһы ... ултырышында цех партия ойошмалары ... эштәрен тикшереп, партия ойошмаһының ойоштороу-етәкселек ролдәрен ... реү турағында яҡшы ҡарар ҡабул ... не. Ләкин ул ҡарарҙы эш папкаһына ... ҡуйыу менән генә сикләнделәр.

Әгәр ҙә райком үҙенең матур ... рысын дауам итһә, цех партия ойошмалары менән тығыҙыраҡ бәйләнеш ... беҙҙең уңыштарыбыҙ тағы ла ҙурайыр ине.

Хәҙер беҙҙең коллектив, социалистик ярышты киң йәйелдереп, хеҙмәт ... тереүсәнлеген: иләү фабрикаһы ... са 6 һәм туҡыу фабрикаһында ... центҡа күтәрергә йөкләмә алды.

Был государство әһәмиәтендәге бурыстарҙы үтәү өсөн көрәштә ойошма... цех партия ойошмаларының етәкселек ... лен артабан күтәреү талап итеү... ирешеү өсөн беҙ бөтә көсөбөҙҙө бирә... ләрбеҙ.

А. Кам...

Өфө кийе-мамыҡ комбинаты ... бюроһы секретары.

СӘСЕҮҘЕ ЮҒАРЫ АГРОТЕХНИК КИМӘЛДӘ ҺӘМ ҠЫҪҠА СРОКТА ТАМАМЛАРҒА!

Белокатайҙа агротехниканы тупаҫ боҙалар

Белокатай районының ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Гребнев «Йәш батыр» колхозының председателе иптәш Ғиләжев телефон шылтыратты:

— Василий Кузьмич, ни эшләргә? Ер кибә, ә сәсергә кондицияллы орлоҡ юҡ. Телефон аша булһа ла киңәш бирегеҙ, уҙ орлоҡтарыбыҙ сәсергәме, юҡмы?

Иптәш Гребнев «Йәш батыр» колхозы председателе иптәш Ғиләжевтә телефон аша бик ныҡ әрләне. Яуаға тарттырыу менән ҡурҡытты һәм председателдең «Ни эшләргә?» тигән һорауына:

— Бер нисек тә яуап бирә алмайым, тик һинең ҡайғыңды телефон аша уртаҡлаша ғына алам, — тип яуап бирҙе. Уҙаң һуң кондицияһыҙ орлоҡто сәсергә ҡушты ла, аҙаҡтан: — сәсегеҙ һәм сығышын баҫыуҙа тикшереп миңә хәбәр итегеҙ, — тип күрһәтмә бирҙе.

Хәҙер районның бөтә колхоздарында ла тип әйтерлек түбән сығышлы, ярамһыҙ орлоҡ сәсәләр. Агротехника талаптарын тупаҫ рәүештә боҙалар. Ә ҡайһы бер колхоздарҙа ярамһыҙ орлоҡто 50—60 километр алыҫлыҡтағы Заготзерно складынан алмаштырып килтергәнде көтөп торалар.

Эрләтелгән Молотов исемендәге ауыл хужалығы артеле председателе иптәш Муров ҡыштан уҡ «беҙҙә кондицияһыҙ орлоҡ юҡ, беҙ сәсеүгә әҙер», тип маҡтанды. Хәҙер бында 1200 центнер орлоҡто алмаштырыу талап ителә. Бынан башҡа 1000 гектар майҙанды һөрөп сәсергә кәрәк. Орлоҡ ташырға аттар етешмәй.

Был колхозда агротехника талаптары менән иҫәпләшмәйҙәр, юғары урожай өсөн көрәшмәйҙәр. Ужым культураларын аҙыҡландырыу планы артылаш та үтәлмәне. Орлоҡто яровойлаштырып сәсмәйҙәр.

Молотов исемендәге колхозды ес трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Тракторсылар бик һай һөрәләр, ләкин уларҙың эше яҡшы баһа менән ҡабул ителә.

Район колхоздары 1000 гектар майҙанда борсаҡ сәсергә тейештәр. Ләкин бер генә колхозда ла был культураны сәсеүгә ярамлы орлоҡ юҡ.

«Победа» һәм «Красный Урал» колхоздарында сығышы ярыуһыҙ түбән, сүпле орлоҡ сәсәләр. Колхоз председателдәре Ғәрипов һәм Карабатов иптәштәр быға нормаль хәл тип ҡарайҙар. Ә район етәкселәре: «Беҙ быны агротехниканы боҙоу тип иҫәпләмәйбеҙ» — тиҙәр.

Белокатай районы колхоздарында агротехника талаптарын бына шулай боҙалар. Бында сәсеүҙең срокларын һаҡлау, сәсеү нормаларын һаҡлау һәм юғары урожайға ынтылыслы нигеҙ һалыу өсөн көрәшмәйҙәр. Колхоздарҙа ерҙе һай һөрөп сәсеү, сәселгән участкаларҙың орлоғон күмдермәй ҡалдырыу фактары бар. Сөнки агрономдар, колхоз председателдәре, трактор бригадаһы бригадирҙары сәскестәрҙе баҫыуға сығарырҙан алда уҡ көйләмәнеләр. Сәскес машиналарының сәсеүес аппараттары, сошниктәре, күтәргес рычагтары бөтә культуралар буйынса ла сәсеү нормаһын ҡарап ентекле көйләп ҡуйылмаған. Һөҙөмтәлә «Победа», Ворошилов, Молотов исемендәге ауыл хужалығы артелдәрендә сәсеү нормаһы сама менән генә билдәләнгән. Шуның арҡаһында был колхоздарҙа йыл һайын тип әйтерлек урожай түбән була.

Н. Ғәлимов.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Ойошҡанлыҡ менән эшләйбеҙ

Ленин исемендәге беҙҙең колхоз члендары быйыл яҙғы сәсеүҙә айырыуса яҡшы, ойошҡанлыҡ менән башҡарҙылар. Колхозсылар баҫыу эштәренең тәүге көндәренән уҡ нормаларҙы арттырып үтәнеләр.

1797 гектар майҙанда туңға һөрөлгән ер ике көндә тырматылды. Тырмасыларҙан Семен Григорьев, Степан Филиппов, Тимербай Сәмиғуллин, Ихлетдин Нуретдинов иптәштәр көндәлек норманы 120—130 процентҡа үтәнеләр.

Баҫыусылыҡ бригадаларының социалистик ярышында иптәш Шакиров бригадаһы алда бара. Уға колхоздың күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды.

Беҙҙең колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Ғиләжетдинов етәкселек иткән трактор бригадаһы колхоз менән төҙөлгән договор йөкләмәләрен яҡшы үтәй. Тракторҙар тотҡарлыҡһыҙ эшләйҙәр. Тракторсылар смена нормаларын арттырып үтәйҙәр. Трактор бригадаһының ҙур ярҙамы арҡаһында беҙҙең колхоз иртә культуралар сәсеүҙә ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп башҡарҙы. Шул уҡ ваҡытта беҙ баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу планын да үтәнек.

М. Шафиҡов,
Туймазы районы Ленин исемендәге колхоз председателе.

Ярышта беренселекте алыу өсөн

Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең патриотик башланғысы беҙҙе намыҫлы эшкә рухландырҙы. Беҙ яҙғы баҫыу эштәрен тәүге көндәрҙән бирле юғары темп менән алып барабыҙ. Бригада көндәлек эш графигын систематик арттырып үтәй. Яғыулыҡҡа экономия яһай. Беҙ 10 хеҙмәт көнөндә 700 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаныҡ. Шуның арҡаһында, беҙ хеҙмәтләндергән баҫыусылыҡ бригадаһы сәсеү планын 30 апрелгә уҡ үтәне.

Тракторсылар бөтәһе лә үҙ-ара ярышып эшләйҙәр. Кәримов Мәснәүи, Сөләймәнов Шәүкәт кеүек алдынғы тракторсылар Иван Бунеев өлгөһөндә сәғәт графигы менән эшләйҙәр. Алдынғы тракторист, комсомолец Кәримов Мәснәүи бригадала беренсе булып сәғәт графигы менән эшләүҙе ойошторҙо. Шуға күрә, сәсеү планын байтаҡ арттырып үтәүгә өлгәште. Ул яғыулыҡҡа экономия яһауҙа ла ҡалған тракторсылар өсөн өлгө булып тора.

Беҙҙең бригада Учалы МТС-ы күләмендәге ойошторолған социалистик ярышта икенсе урында бара. Ә беҙ тиҙ арала беренсе урынға сығыу өсөн ныҡышмалы көрәш алып барабыҙ.

А. Дәүләтбаев,
Учалы МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры.

Иртә культуралар сәсеүҙе һуҙалар

Асҡын районы колхоздары быйыл яҙғы баҫыу эштәрен әҙерлекһеҙ ҡаршыланылар. Шул арҡала эш ойошҡанлыҡ менән башланманы. Колхоз һәм район етәкселәре был тарҡаулыҡты, тәүҙә, «ер өлгөрмәгән әле», тигән һылтау менән аҡлатырға тырыштылар. Ә һуңынан, тупраҡ өлгөргәс, орлоҡ ташыу менән шөғөлләнергә тура килде.

Быйыл район буйынса 10 мең центнерҙан артыҡ орлоҡ етешмәне. Былтыр орлоҡсолоҡ участкалары урожайына ҡамһеҙ ҡарау бына шуға килтерҙе. Күршеләге Бәрәй, Тәтешле, Балтас райондары колхоздарынан орлоҡ алынды. Сәсеүҙең йәйелдереп ебәрәһе ваҡытта орлоҡ ташыу менән шөғөлләнелде. Бынан тыш, күп кенә колхоздарҙа тупланған орлоҡтар ҙа үҙ ваҡытында сәсеү кондицияһына еткерелмәне. Был да яҙғы баҫыу эштәренә тотҡарлыҡ яһаны.

Асҡын МТС-ы (директоры иптәш Кукин) машина-тракторҙар паркын баҫыу эштәренә насар әҙерләне, ремонт сифатһыҙ үткәрелде. Һөҙөмтәлә тракторҙар эшкә башлауҙың беренсе көндәренән уҡ ватылдылар. «Ҡыҙыл таң», «Ирек», Азин исемендәге колхоздарҙа ХТЗ тракторҙарының ватылып ултырыуы быңың асыҡ миҫалы булып тора.

Шуның менән бергә, МТС яғыулыҡ һәм майлау материалдары менән тәьмин ителмәгән.

Бына Азин исемендәге колхоз. Бында 5 трактор эшләргә тейеш. Улар колхозға һуңға ҡалып килтерелделәр.

Был колхозда иптәш Файзрахманов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы 27 гектар майҙанда һоло һәм күп кенә бойҙайҙы ҡул менән сәскән.

Бындай хәлде «Сейә тау» колхозында ла күреп була. Бында ла ҡул менән сәсеүгә рөхсәт иткәндәр.

ВКП(б)-ның район комитеты һәм район Советы исполкомынан яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙәге был тревогалы хәлдән сығыу һәм сәсеү планын тиҙ көндә үтәү өсөн бөтә сараларҙы күреү талап ителә.

Ә. Кирәев.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Башҡорт АССР-ы колхоздарында яҙғы баҫыу эштәренең барышы

(План үтәлеше 1951 йылдың 5 майында, проценттарҙа)

Тотҡан урыны	Райондар	Ашлыҡ сәскәне	Аҫыс ултыртылғаны	Ужым тырматылған	Бөтә төр мал аҙығы культуралары сәскәне
1	Баймаҡ	96,5	48	42	22
2	Хәйбулла	95,7	58	79	35
3	Әбйәлил	94,4	54	89	54
4	Иомағуж.	86,8	68	73	102
5	Бүздәк	85	77	80	72
6	Зианчура	82,7	71	93	56
7	Матрай	81,2	47	75	47
8	Абзан	80,6	77	68	32
9	Ҡандра	80	88	87	65
10	Дәүләкән	79,3	44	91	77
11	Стәрлетамаҡ	79,1	68	14	35
12	Туймазы	78,7	100	101	100
13	Шишмә	78,1	61	83	69
14	Әлшәй	77,9	45	120	48
15	Благовар	77,6	57	53	57
16	Күгәрсен	77	69	99	37
17	Балтас	76,5	77	49	18
18	Миәкә	76,2	—	77	49
19	Өфө	74,4	75	85	70
20	Учалы	72,9	72	90	14
21	Ғафури	72,7	52	31	35
22	Стәрлебаш	71,8	88	97	40
23	Мияҡы	71,7	64	71	32
24	Илеш	70	71	74	36
25	Янаул	70	78	76	40
26	Дүртөйлө	69,3	85	108	30
27	Саҡмағош	68,8	101	70	40
28	Шаран	67,8	100	70	53
29	Белорет	66,6	—	9	18
30	Ҡыйғы	66,1	—	45	36
31	Кәйпргәс	65,4	59	87	23
32	Бәләбәй	65,2	37	45	42
33	Ауырғазы	65,2	55	74	43
34	Воскресен	63,4	50	50	28
35	Тәтешле	61,9	—	44	50
36	Ермәкәй	61,5	70	64	45
37	Мәләүез	61	55	84	42
38	Федоровка	60,9	81	71	35
39	Салауат	60,4	—	41	22
40	Бәрәй	60,4	87	60	22
41	Бөҙәй	59,3	92	65	33
42	Архангел.	58,1	—	61	40
43	Баҡалы	57,2	68	66	48
44	Бишбүләк	57	67	40	34
45	Нуриман	56,6	—	37	51
46	Ҡалтасы	56,3	100	77	46
47	Мишкә	56,3	80	44	18
48	Ҡырмыҫҡалы	55,7	72	68	16
49	Йылайыр	54,2	—	21	3
50	Бөрйән	54	—	34	3
51	Покровка	53,6	—	75	17
52	Бүре	50,9	64	69	20
53	Кушнаренк.	50,5	63	39	17
54	Байҡыбаш	50,1	—	55	44
55	Иглин	48,7	80	68	27
56	Благовещ.	47,4	113	52	25
57	Белокатай	46,8	—	39	15
58	Асҡын	46,5	—	62	35
59	Ҡариҙел	45,1	—	28	25
60	Оло Теләк	42,5	—	12	50
61	Красноҡам	39,9	81	60	18
62	Дыуан	38,8	—	55	18
63	Мәсетле	38,2	—	65	21
64	Октябрьский ҡалаһы	63,5	—	—	53

Һуңғы биш көндә Әлшәй, Ҡалтасы, Бәләбәй, Хәйбулла райондарының колхоздары һәм МТС-тары яҙғы сәсеү планын үтәүҙе 24—27 процент үҫеш бирҙеләр. Юғары темпта эшләгән Әбйәлил, Бүздәк һәм башҡа райондарҙың колхоздары бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеүҙе тамамлау алдында торалар. Баймаҡ, Абзан, Шишмә, Туймазы, Миәкә, Балтас райондарының колхоздары бойҙай сәсеү планын арттырып үтәнеләр.

Шуның менән бергә, айырым райондарҙың партия райкомдары һәм район Советы исполкомдары яҙғы сәсеүҙе юғары темпта эшләүҙе тәьмин итмәнеләр. Ғафури районының колхоздарында, майҙың тәүге биш көнләгенә ҡарағанда, һуңғы биш көнлөктә эш темпы 4 тапҡырға кәм булды. Покровка, Ҡырмыҫҡалы, Мәләүез райондары колхоздарында ла шундай уҡ хәл.

Иглин, Бүре, Мишкә һәм башҡа райондарҙың колхоздарында мал аҙығы культуралары сәсеүҙә артта ҡалыу бөтерелмәгән әле. Ә Белокатай районы колхоздарында бер генә гектар ҙа мал аҙығы культуралары сәселмәгән.

Туймазы, Покровка, Иомағуж райондарының колхоздары һәм МТС-тары яҙғы һөрөүҙе тамамлап, пар һөрөүгә башланылар. Белорет, Ҡырмыҫҡалы, Воскресен райондарының колхоздарында һөрөү эше бик аҡрын бара.

Бөртөклө ашлыҡ, мал аҙығы, майлы һәм техник культуралар сәсеүҙең иң яҡшы сроктары үтә. Был хәл эшта темпты көндән-көн арттырыуҙы талап итә.

СОВЕТ ФӘНЕ ҠАЛАҺЫ

(Мәскәү государство университеты төҙөлешендә)

Һуңғы йыл ярым ваҡыт эсендә унарлаған мең кешеләр Ленин тауҙарында булдылар. Улар араһында Мәскәү кешеләре генә түгел, Ленинград кешеләре лә, Ҡаҙағстанда, Алыҫ Көнсығышта, Украинала, Белоруссияла, Башҡортостанда йәшәүсе кешеләр ҙә бар ине. Был төҙөлештә халыҡ демократияһы илдәренең бик күп вәкилдәре күргәндәр.

Ленин тауҙары хәҙер миллионлаған кешеләрҙең иғтибарын үҙенең тәбиғи матурлығы менән генә түгел, унда барған гүзәл фән ҡалаһы төҙөлөшө менән үҙенә йәлеп итә.

Бында — сталинсы эпохаһының иң бөйөк төҙөлештәренең береһендә күп меңдәрсә кешеләр эшләй. Мәскәүҙәге В. М. Ломоносов исемендәге государство университетының бөйөк бинаһының—совет фәненең буласаҡ дворецының төҙөлөш корпустары «Күкнә тиклем» етмәһә лә, тау өҫтөнән 200 метрҙан күберәккә ашып киткән инде.

Ленин тауҙарынан башҡаланың урамдары һәм майҙандары ап-асыҡ күренеп тора. Шулай уҡ Мәскәүҙең бөтә мөйөштәренән дә Ленин тауҙары һәм унда төҙәлә торған ҡала корпустары бик яҡшы күренәләр. Ленин тауҙары төндә айырыуса асыҡ күренә: бөтә тәүлек буйына бер минутҡа ла туҡтап тормаған, ныҡышмалы ижади эш ҡайнап торған яңы төҙөлөштә меңдәрсә уттар балҡый.

Төҙөлөш майҙаны 160 гектар ерҙе алып тора. Дөйөм оҙонлоҡтары 40 километр булған яңы бетон юлдар уратып ала уны. Унда тимер юлдан махсус ветка үткәрелгән. Майҙанға төҙөлөп бөткән меңдәрсә төҙөлөш механизмдары һәм машиналары төҙөүселәрҙең эшен еңеләйтә. Бында уларҙа ярҙамсы предприятиелар эшләй. Улар тимер бетондан, ағастан, металдан конструкциялар, бетон растворҙар әҙерләйҙәр, механизмдарға ҡағылышлы һәм урта ремонттар үткәрәләр.

Төҙөлөш майҙаны тирәһендә төҙөүселәр йәшәүсе төҙөк ҡала үҫеп сыҡты. Унда магазиндар, столовойҙар, ларектар асылған. Мунсалар, көр йыуыу урындары, клубтар һәм кинотеатрҙар, балалар баҡсалары һәм яслелар, көндәҙге һәм киске урта мәктәптәр, тенге санаторий төҙәлгән.

Бөйөк Сталин инициативаһы буйынса Мәскәү государство университеты биналарының яңы комплексын төҙөү буйынса тәүге эштәр башланған көндән алып, ни бары ике йыл ярым самаһы ваҡыт үтте. 1949 йылдың 4 ғинуарында ҡеүәтле экскаваторҙар бинаның төп корпусы фундаменты өсөн тәүге кубометр ерҙе аҡтарҙылар. Ә хәҙер унда биналарҙы матурлау һәм биҙәкләү эштәре бара.

Сталин заданиеһен үтәү менән ғорур булған күп меңдәрсә төҙөүселәр коллективы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә гүзәл еңеүҙәргә өлгәштеләр. 1951 йылдың 1 ғинуарына университеттең иң мөһим биналары — төп корпус, химия һәм физика факультеты корпустары нигеҙҙә төҙөлөп бөттө, биология факультеты, механика институты һәм махсус лаборатория биналары һалына.

Төҙөүселәрҙең эш фронты киң: ташсылар төп корпустың 26 ҡатлы кирбес стеналарын һалыу эшен тамамланылар һәм башняның стеналарын күтәреү эшенә әҙерләнәләр. Химия, физика һәм биология факультеттары биналарында эштәр тамамлана, шулай уҡ механика институты бинаһы, астрономия обсерваторияһы, креоген лабораториялары ҡыҙыу темп менән төҙәлеп ята.

Төҙөүселәр үҙгән йылда ғына 30 мең тонна металл конструкциялар урынлаштырҙылар. 70 миллиондан артыҡ кирбес, 120 мең кубометр бетон һалдылар һәм миллион ярым кубометр ер ҡаҙҙылар. Был һандарҙа төҙөүселәрҙең ҙур хеҙмәт күтәренкелектәре сағылына.

Буласаҡ уҡыу бүлмәләренең, лабораторияларҙың, аудиторияларҙың һәм студенттарҙың, аспиранттарҙың, профессорҙарҙың торлаҡ бүлмәләренең күренеше хәҙерҙән үк күреп була.

Бинаның тышын ап-аҡ керамик плиталарға көйләндереүсе кейләүселәр ҙә башҡаларҙан артта ҡалмайҙар. Улар хәҙер ун икенсе ҡатҡа еттеләр. Ләкин көйләүселәр алдында тағы ла ҙур бурыстар тора. Быйылғы йылда улар 250 мең квадрат метр күләмдә тышҡы стенаны мәрмәр һәм гранит плиталар менән көйләргә тейештәр. Улар үҙҙәренең эштәрендә ҙур яуаплылыҡ һиҙеп, стахановсы эш методтарын ҡулланалар. Бында күбеһенсә йәштәр — һөнәрселек мәктәбен тамамлап сығыусылар эшләйҙәр. Был иптәштәрҙең күптәре үҙҙәренең йәш булыуҙарына ҡарамаҫтан, норманы арттырып үтәйҙәр. Мария Шалахова, Иван Писемский һәм башҡа иптәштәрҙең бригадалары норма буйынса 14—16 квадрат метр урынына 30—35 квадрат метр стена көйләйҙәр.

Паркет төҙөүселәр ҙә ҙур ғына эштәр башҡарҙылар. Ярты миллион квадрат метр иҙән паркет плиталар менән ҡапланды. Уларҙың фән дворецы төҙөлөшөнә һалған вкладтары бына шундай. Элек төҙөлөштә балта оҫтаһы, ер ҡаҙыусы, бетонсы һәм таныс булып эшләгән йөҙәрләгән йәш эшселәр хәҙер паркет төҙөү профессияһын үҙләштерәләр. Бөйөк Сталин эпохаһының грандиоз төҙөлөшө — Мәскәү государство университетының иң бөйөк бинаһы 1951 йылдың аҙағына һалынып бөтөргә тейеш. Бының өсөн төҙөүселәр бөтә көстәрен һалалар. Һәм был көрәштә уларға бөтә Тыуған ил ярҙам итә. Илебеҙҙең бөтә мөйөштәренән — Белоруссия, Украина, Карело-Фин ССР-ҙарынан һәм башҡа урындарҙан төҙөлөш материалдары, ағас, металл, гранит, мәрмәр, керамика, мебель, паркет плиталар, төрлө машиналар һәм университет лабораториялары өсөн оборудованиелар килә. Был төҙөлөштә рус, белорус, украин, грузин, молдаван һәм башҡорт халыҡтары хеҙмәт вахтаһында торалар — бөйөк Тыуған илебеҙҙең бөтә кешеләре фән дворецы төҙөү эшенә үҙҙәренең вкладтарын индерәләр.

Мәскәү государство университеты төҙөүселәр төҙөлөштә тиҙләтелгән эш методтарын индереү һәм ҡулланыу буйынса ижади эш өлгөләре күрһәтәләр. Төп корпустың иң бөйөк өлөшөнөң ҡеүәтле нигеҙҙәре төҙөлөш практикаһында тәү тапҡыр һығылмалы ҡыҙыл балсыҡ грунтына һалынды. Монтаж эше лә үҙенең күләме менән яңы һәм бығаса күрелмәгән кимәлдә йәйелдерелде. Төп корпустың 38000 тонна ауырлығындағы ҡаркасын монтажлау өсөн генә бер ҡаттан икенсе ҡатҡа күсереп йөрөтөргә яраҡлаштырылған 15 тонна йөк күтәрешле махсус крандар төҙәлде.

Советтар иле университет төҙөүселәрҙе иң алдынғы техника менән тәьмин итте. Унда ташсыларҙың, штукатурсыларҙың, бетонщиктарҙың һәм монтажниктарҙың хеҙмәтен еңеләйтеүсе камиллашҡан механизмдар: ҡеүәтле экскаваторҙар, бульдозерҙар, төрлө крандар һәм бик күп машиналар бар. Төҙөлөштә ҡулланыла торған механизмдарҙың ҡеүәте 12000 ат көсөнә етә. Эшселәрҙе һәм еңел нәмәләрҙе иң юғары ҡаттарға меңдереү өсөн практикала тәү тапҡыр тиҙ йөрөүсе лифттар ҡулланыла. Улар үҙгән йылдың йәйендә эшләй башланылар. Бында күп кенә яңы алдынғы эш методтары тыуҙы һәм улар киң күләмдә ҡулланыла башланы.

Һәр бер үткән көн беҙҙе университеттең төҙөлөп бөтөү көнөн яҡынайта. Тиҙҙән илебеҙҙең иң ҡарт уҡыу йорттарынан һаналған Ломоносов исемендәге Мәскәү государство университеты студенттары өсөн Ленин тауҙарындағы ер-ләнең һәм иң бөйөк бинаның ишектәре асыласаҡ. Был иң киткес һәм грандиоз ҡоролмалар бында ҡалған һәр бер кешене таңға ҡалдырасаҡ. Ул беҙҙең партиябыҙҙың, хөкүмәтебеҙҙең һәм лично иптәш Сталиндең студенттарға, уҡытыусыларға, профессорҙарға һәм фән работниктарына булған төрлө хәстәрлеген күрһәтә.

Мәскәү йылғаһы буйында, аҡ таштан эшләнгән совет фәненең дворецы ер йөҙөндә иң ҙур уҡыу йорто буласаҡ. Ул бөтәһе 20 бинаны берләштерәсәк. Уларҙың ғөмүми күләме 2 миллион кубометрҙан ашыу. Институттың бары тик төп корпусының күләме генә 1.250000 кубометрға етә.

Төп бина 200 метр бейеклектәге башня менән үҙәк өлөштән, 18 ҡатлы ике, 12 һәм 9 ҡатлы дүртәр бинанан тора. Улар менән йәнәшә клуб һәм спорт биналары төҙәлә.

Ленин тауҙарында университет майҙанынан бер иң тиклем эстәрәк биология, химия, физика факультеттарының, механика институтының һәм төрлө лабораторияларҙың корпустары, шулай уҡ күп кенә специаль ярҙамсы биналар урынлаштырылған.

Университет биналарының эсендә лекциялар өсөн 23, группа занятиелары өсөн 125 аудитория һәм 700 фәнни һәм уҡыу лабораториялары эшләнә. Махсус уңайлаштырып эшләнгән бинаға университеттең библиотекаһы урынлаштырыласаҡ. Ул донъяның иң ҙур библиотекаларының береһе буласаҡ. Бынан башҡа музейҙар ҙур ғына биналарҙы биләп торасаҡ. Шулар араһынан ер эштәрен өйрәнеү музейы генә лә бинаның дүрт ҡатына урынлаштырыласаҡ.

Университеттең төп корпусын етеҙ һәм тауышһыҙ йөрөүсе 66 лифт хеҙмәтләндерәсәк. Һәм ғөмүмән был фән ҡалаһында бөтәһе 120-нән артыҡ лифт эшләп, улар бер үк ваҡытта 2.500-ҙән артыҡ кешене күтәрәсәктәр.

Бында студенттарға, уҡытыусыларға һәм профессорҙарға уҡыу өсөн генә түгел, ә тормош өсөн дә бик уңайлы шарттар тыуҙырыла. Дөйөм торлаҡ биналарында 6 мең студент һәм 750 аспирант торасаҡ. Уларҙың һәр береһе өсөн 8 һәм 12 метрлы бүлмә яҡшы, матур мебелдәр менән йыһазландырыла. Һәр ике бүлмә өсөн душ һәм башҡалар буласаҡ. Бынан башҡа ял итеү һәм ҡунаҡ бүлмәләре төҙәлә. Уҡытыусылар һәм профессорҙар составы яңы университетта өсәр һәм дүртәр бүлмәле 250-нән артыҡ квартира аласаҡтар.

Был ҡалала тороусыларҙы яҡшы итеп йыһазландырылған клуб һәм спорт залы хеҙмәтләндерәсәк. Унда 500 квадрат метрлы ябыҡ һыу бассейны һәм гимнастика залдары, шулай уҡ бокс, штанга, көрәш һәм төрлө гимнастика уйындары өсөн махсус залдар, ҙур душ һәм медицина бүлмәләре булдырыласаҡ. Йәйге осорҙа спорт өсөн 12 спорт майҙаны, көмә станцияһы һәм башҡалар йыһазландырыла.

Был фән ҡалаһы йәшеллек эсенә сумасаҡ. Ағастар ултыртыу өсөн 60 гектар ер бүленгән. Шуларҙан 32 гектар майҙанда агроботаник баҡса булдырыласаҡ. Унда СССР-ҙа үҫә торған бөтә төр ағастар ултыртыласаҡ.

Совет йәштәренең иң һөйөклө һәм иң яҡын дуҫы И. В. Сталиндең инициативаһы менән төҙәлгән был фән дворецы бына шундай гүзәл һәм матур буласаҡ.

Университеттең төҙөүселәр коллективы иптәш Сталин тарафынан ҡуйылған бөйөк бурысты намыҫ менән үтәү өсөн үҙҙәренең бөтә көстәрен һәм һәләттәрен һалып бына шулай ҙур шатлыҡ һәм күтәренкелек менән эшләйҙәр.

Кистәрен Ленин тауҙарындағы университет бинаһының бөйөк ҡаркасы өҫтөндә урынлаштырылған ҙур яҡут йондоҙо яна. Ул совет кешеләренең тыныслыҡҡа арналған ижади хеҙмәтенең символы булып тора. Ул башҡалабыҙҙың күгенә юғарыраҡ күтәрелгән һайын бәхетле совет йәштәре өсөн фән дворецы — Мәскәү государство университетының ишектәре асылыу көнө яҡыная бара.

Б. Автономов,
С. Мәүлютов.

Художниктар Б. Березовский һәм Б. Мухин эшләгән, Госфининздат тарафынан сығарылған плакат.

(ТАСС фотохроникаһы).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 5 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 5 майҙа 44-се ултырышы булды. АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Билдәле булыуынса, 4 майҙағы ултырышта СССР делегацияһы көнбайыш державалар делегацияларының көн тәртибенең 2 майҙа тәҡдим ителгән «А» вариантының беренсе пунктының ҡоралланыуҙарға һәм ҡоралды көстәргә ҡағылған өлөшөнә төҙәтеү индергән шарттарҙа ҡабул итергә риза булыуы тураһында белдергәйне. Был белдереүҙе яһап, СССР вәкиле, көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү хәҙер дүрт держава ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы тәҡдимгә ҡарата көнбайыштағы өс держава позицияһына бәйләнгән, тип билдәләгәйне.

5 майҙағы ултырышта беренсе булып сығыш яһап, Франция вәкиле Пароди «көн тәртибенең төрлө статьяларының һәм төрлө положениеларенең нисек тәҡдим ителеүҙәре» тураһында оҙон фекерҙәр менән һөйләй башланы. Кәңәшмәнең бөтә барышын бер яҡлы ғына яҡтыртып, Пароди фактарға тулыһынса ҡапма-ҡаршы итеп, имеш көнбайыш державалар «күп кенә уступкалар» яһанылар, тип күрһәтергә маташты. Бөтә был һөйләнеүҙәр Пародиға «А» вариантының беренсе пунктына совет төҙәтеүен ҡабул итеүҙән үҙенең баш тартыуын аҡлау өсөн кәрәк булды. Пароди, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһында совет тәҡдиме ҡабул ителерлек түгел, тип белдерҙе.

Великобритания вәкиле Дэвис тә ошондай уҡ рухта һөйләне. Үҙенең юғәнһеҙ сығышында Дэвис шуға тиклем килеп етте, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарау хаҡында совет тәҡдимен «оятһыҙ» тип атаны.

АҠШ вәкиле Джессеп Пароди һәм Дэвис сығыштарына ҡушылды.

Унан һуң СССР вәкиле А. А. Громыко сығыш яһаны.

— Совет делегацияһы, — тине ул, — көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеүҙе һәм тимәк, министрҙәр Советен саҡырыуҙы АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең ысынлап та теләүҙәренә ҡарата ҡайһы бер шикләнеүҙәрҙе әйткәйне инде. Европала тыныслыҡты яҡлауға һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға мөнәсәбәте булған айырыуса мөһим һәм үткер мәсьәләләрҙе көн тәртибенә индереүгә көнбайыштағы өс держава вәкилдәренең беҙҙең кәңәшмәбеҙ башланғас та юл ҡуймаҫҡа маташыуҙары бындай төр шикләнеүҙәр өсөн нигеҙ булып тора. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ өс держава вәкилдәре тарафынан индерелгән тәҡдимдәрҙе тикшереүҙә, көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеүгә өмөтләнеп, сыҙамлы рәүештә ҡатнашыуҙы дауам иттек. Килешеүгә өлгәшеү өсөн бөтә мөмкин булған нәмәне эшләргә әҙер тороуыбыҙ һәм түҙемлелегебеҙ, әлбиттә, йомшарманы. Ләкин, беҙ юғарыла мин әйтеп киткән нәмә тураһында хәҙер йәки һуңлабыраҡ һығымта яһарға тейеш буласаҡбыҙ.

Яңы һуғышты әҙерләү буйынса сараларҙы үткәреүҙә өс державаның ҡулдарын сисеүгә алып барыусы тәҡдимдәр менән совет делегацияһы риҙалаша алмай.

Совет хөкүмәте, тине Громыко, дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре Советенең сессияһын саҡырыу тураһындағы тәҡдимде бының өсөн индермәне. Ул был тәҡдимде тыныслыҡты нығытыу буйынса сараларҙы министрҙәр Советы сессияһында тикшереү өсөн ошо кәңәшмәлә килтерелгән башҡа илдәр хөкүмәттәренең ҡарамағына индерҙе. Беҙҙең кәңәшмәбеҙ барышында, айырыуса һуңғы көндәрҙә, өс держава вәкилдәренең ҡылығы, гәрсә, һүҙҙә килешеүгә өлгәшергә теләү тураһында белдерһәләр ҙә, көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеүҙе, тимәк, сит ил эштәре министрҙәре Советенең сессияһын саҡырыуҙы көнбайыштағы өс держава хөкүмәттәренең теләмәүенә беҙҙе ышандырҙы. Бындай шарттарҙа, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы пунктты көн тәртибенә индереү хаҡындағы тәҡдимде ҡабул итеүҙән дүрт держава вәкилдәренең киҫкен баш тартыуҙары ваҡытында бында Дэвис сығыш яһаған көүек белдереүҙәр өс держава хөкүмәттәренең ысын уйҙарын йәшереү өсөн билдәләнелгән ширма ғына булып торалар. Был хөкүмәттәрҙең ысын уйҙары яңы һуғышты әҙерләү, Германия милитаризмын аяҡҡа баҫтырыу һәм ҡоралланыуҙар артынан тотҡарһыҙ ҡыуыу буйынса сараларҙы артабан да үткәреүҙән тора.

Дэвистең, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыуға ҡарата мәсьәләне ҡарау тураһында совет тәҡдиме «оятһыҙ тәҡдим» булып тора һәм Великобритания хөкүмәте, имеш, килешеүгә өлгәшергә ынтыла, тигән юғәнһеҙ белдереүенә ҡағылып, Громыко былай тине:

— Дэвистең был белдереүе төрлө мәсьәләләр буйынса беҙгә элек тә осрарға тура килгән ғәҙәттәге лейбористик демогогия булып тора. Совет тәҡдимдәре түгел, ә Великобритания хөкүмәтенең позицияһы оятһыҙ булып тора. Ул, бер яҡтан, килешеүгә өлгәшергә һәм министрҙәр Советы сессияһын саҡырырға үҙенең әҙер булыуы тураһында белдерә, ә икенсе яҡтан, бындай килешеүҙе өҙөү, халыҡтарҙы, шул иҫәптән, Великобритания халҡын алдау өсөн бөтә мөмкин булған нәмәне эшләй.

— Ошондай законлы һорау килеп тыуа, — тине Громыко,—дүрт держава араһында мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртырға теләү тураһында һөйләнеүҙәр менән йәшереп, Великобритания хөкүмәте Дәвисте Париждағы кәңәшмәгә Советтәр Союзына ҡаршы һуғыш әҙерләү буйынса сараларҙы тағы ла активыраҡ үткәреү өсөн ебәрмәнеме икән? Был һорауҙың законлы булып тороуына беҙҙе шулай уҡ Дэвистең — Великобритания хөкүмәтенең беҙҙең кәңәшмәбеҙҙәге официаль вәкиленең — общиналар палатаһында Советтәр Союзына ҡаршы атом һуғышын тоҡандырырға саҡырылған Черчиллдең вәхшилек пландарын яҡлап асыҡтан-асыҡ сығыш яһауы һәм был ваҡытта Дэвистең үҙен «ғәйепһеҙгә мәсхәрәләнгән» кеше итеп күрһәтеүе факты ла ышандыра.

— Мәсьәлә шулай тора, — тине унан ары Громыко: тыныслыҡты яҡлауға һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға туранан-тура мөнәсәбәте булған был проблемаларҙы беҙ ысынлап та тикшерергә теләйбеҙме, йәки беҙ ғәмәлдә быны теләмәйбеҙме, ә тик буш декларациялар менән генә шөғөлләнәбеҙме. Был һорауҙарҙан беҙ ситкә китә алмайбыҙ. Дэвис, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса үҙ тәҡдименең көнбайыш державаларҙың вәкилдәре өсөн ҡабул ителерлек булмауын совет делегацияһына аңларға кәрәк ине, тип белдерә. Ләкин СССР делегацияһы үҙ наүбәтендә Дэвис иғтибарын был мәсьәлә буйынса өс держава вәкилдәре сығыш яһаған тәҡдимдең беҙҙең кәңәшмәбеҙҙә килешеү өсөн нигеҙ булып тора алмауын аңларға ваҡыт икәнлегенә юнәлтә.

Көн тәртибенең өс делегация тәҡдим иткән «А» вариантына СССР делегацияһы 4 майҙағы ултырышта үҙенең мөнәсәбәтен белдергәйне инде, тип Громыко, көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү хәҙер СССР, АҠШ, Франция һәм Великобританияның хәрби ҡоралдарын һәм ҡоралды көстәрен кәметеү тураһындағы тәҡдимгә ҡарата өс держава позицияһына бәйләнгән, тип яңынан билдәләне.

Громыко сығышынан һуң Джессеп тәҡдиме буйынса ултырыш ябылды.

Прагала Совет Армияһының Чехословакияны азат итеүенә 6 йыл тулыуға арналған тантаналы ултырыш

ПРАГА, 5 май. (ТАСС). Чехословакия халҡы үҙ илен-герой Совет Армияһының азат итеүенә 6 йыл тулыуҙы ғәйәт ҙур рух күтәренкелеге менән билдәләй. 5 майҙа Прагалағы Милли театрҙа байрамға бағышланған тантаналы ултырыш булды.

Президиум өҫтәле артында — республика президенты Клемент Готвальд, премьер-министр А. Запотоцкий етәкселегендә Чехословакия хөкүмәте ағзалары, Чехословакия коммунистар партияһының генераль секретаре Рудольф Сланский, Советтәр Союзы маршалы И. С. Конев етәкселегендә СССР-ҙың хөкүмәт делегацияһы, Польша, Венгрия, Румыния, Болгария, Албания һәм Германия Демократик Республикаһының хөкүмәт делегациялары. Ултырышта шулай уҡ Чехословакияның башҡа күренекле политик һәм общественность эшмәкәрҙәре, Советтәр Союзының, Ҡытай Халыҡ Республикаһының һәм халыҡ демократияһы илдәренең һәм Германия Демократик Республикаһының [illegible] ҡатнаша.

Телмәр менән сығыш яһаған А. Запотоцкий бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең генералиссимусы һәм уҡытыусы иптәш И. В. Сталин тарафынан етәкселек ителгән Советтәр Союзының кешелекте гитлерсе тираниянан ҡотҡарыуҙағы, Чехословакияны немец-фашист баҫҡынсыларынан азат итеүҙәге тарихи ролен билдәләне. Запотоцкийҙең телмәре иптәш Сталин, Совет Армияһы һәм совет халҡы хөрмәтенә күп тапҡырҙар көслө овация менән бүленде.

Унан һуң, [illegible] Совет Хөкүмәт делегацияһының башлығы, Советтәр Союзы Маршалы И. С. Конев телмәр менән сығыш яһаны.

Ултырышта [illegible] ҡатнашыусылар ҙур күтәренкелек менән И. В. Сталинға ҡотлау хатты ҡабул иттеләр. Хатты уҡыған ваҡытта залда ҡатнашыусыларҙың бөтәһе лә урындарынан торҙолар һәм иптәш Сталин хөрмәтенә көслө овация яһанылар.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 6 май. (ТАСС). Корея Халыҡ Демократик Республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 6 майҙа, бөтә фронттарҙа ла Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтары менән берлектә дошманға ҡаршы ҡаты һуғыш алып барыуҙы дауам иттерәләр, тип хәбәр итте.

Фронттың көнбайыш участкаһында Халыҡ армияһының частәре дошмандың контратакаһын кире ҡағып, йәнле көсөнә һәм техникаға ҙур юғалтыуҙар яһанылар.

5 майҙа Халыҡ армияһының частәре дошмандың бер [illegible] һыуға батырҙылар.

Австрияла совет кинофильмдарҙының популярлеге

ВЕНА, 5 май. (ТАСС). Совет кинофильмдары Австрияла ғәйәт ҙур уңыш менән файҙаланалар. Һуңғы 8 ай эсендә Венаның совет информация үҙәгендә халыҡҡа 50-нән артыҡраҡ совет фильмы күрһәтелде. Улар араһында «Ант», «Берлиндең емерелеүе», «Ленин 1918 йылда», «Рус мәсьәләһе», «Кубань казактары», «Мусоргский», «Мәскәүҙән алыҫта» тигән һәм башҡа фильмдар бар. Уларҙы 150 меңдән ашыуыраҡ кеше ҡараны.

«Мәскәүҙә Беренсе Май» тигән совет хроникаль фильмын Вена тамашасылары айырыуса яратып ҡаршыланылар. Экранда иптәш Сталин күренгәс көслө овация тыуҙы.

«Иптәш Сталин!», «Иптәш Сталин! Советтәр Союзы!» тигән тауыштар яңғыраны.

«Сталинград һуғышы», «Берлиндең емерелеүе», «Урманда булған хәл» һәм башҡа картиналар ҙур популярлыҡ менән файҙаланалар. Мәҫәлән, Липпта (Америка зонаһы) «Берлиндең емерелеүе» фильмын дүрт көн эсендә 9 мең кеше ҡараны. Зальцбургта был фильм [illegible] театры «Штадткино» экранында бер [illegible] күрһәтелде һәм бер ваҡыт тамаша залы халыҡ менән тулы булды.

Эшселәрҙән, преподавателдәрҙән, йорт хозяйкаларынан, студенттарҙан [illegible] хаттар алына, улар был хаттарҙа совет кинофильмдары тураһында һоҡланыу белдерәләр. Хаттарҙа, совет фильмдары донъяның иң яҡшы фильмдары, улар [illegible] матур итеп эшләнгәндәр һәм [illegible] сағылдыралар, [illegible] хеҙмәт итәләр һәм Америка-Англия һуғыш тоҡандырыусыларын фашлайҙар, тип билдәләнә.

Хәҙер совет кинофильмдары Австрияның бөтә ҡалаларында ла һәм ауылдарында ла күрһәтелә.

Совет баскетболистарының еңеүе

ПАРИЖ, 6 май. (ТАСС). 6 майҙа иртәнсәк баскетбол буйынса Европа беренселегенә СССР менән Австрия командалары араһында ярыш булып үтте. Уйын 71:34 иҫәбе менән совет баскетболистәре файҙаһына тамамланды.

6 майҙа «Ленинсе» газетаһы призына уҙғарылған эстафетала физкультура техникумы беренсе урынды алды.

Һүрәттә Эстафетала еңеүсе команда члендәренән (һулдан уңға): Е. Елина, В. Кривошеин, Л. Медякова, В. Филатов, В. Кондюкова һәм В. Епифанов [illegible]тәр.

А. Чвервинский фотоһы.

ФУТБОЛ

Тәүге осрашыу

6 майҙа «Динамо» стадионында «Спартак» һәм «Динамо» командалары араһында футбол буйынса быйылғы сезонда тәүге осрашыу булды.

Матч ҡыҙыу темп менән башланып китте. Спартаксылар уйындың тәүге минуттарында уҡ атакаға күстеләр. Ләкин счет тиҙ генә асылманы. Беренсе таймдың һуңғы минуттарында ғына спартаксылар «Динамо» ҡапҡаһына беренсе тупты индерҙеләр.

Матчтың икенсе яртыһында счет [illegible] сеҙләнде, уйын тағы ла ҡыҙыу [illegible] алды.

Матч бөтөргә 5 минут ҡалғас, спартаксылар «Динамо» ҡапҡаһына [illegible] артлы өс туп индерҙеләр. Уйын [illegible] иҫәбе менән «Спартак» командаһы [illegible]ҙаһына тамамланды.

И. Герши[illegible].

Колхоздар яңы китаптар алалар

Күптән түгел Ҡыйғы районының Ленин һәм Ворошилов исемендәге әрелтелгән колхоздары район китап магазиненән меңәр һумлыҡ китап һатып алдылар. Был китаптар араһында Карл Маркстың «Капиталы» (3 томда), И. В. Сталин әҫәрҙәренең татар телендә сыҡҡан тулы баҫмаһы, ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы, И. В. Сталиндең биографияһы, Мәжит Ғафури, Шәриф Камал, Са[illegible] Ҡулаш һәм башҡа башҡорт, татар [illegible] яҙыусыларының әҫәрҙәре бар.

Хәҙер райондың ун колхозында библиотека ойошторолоп, унда яңы китаптар алынды.

Түбән Ҡыйғы ауылындағы библиотекала апрель айында 700 һумлыҡ яңы [illegible]таптар һатып алынды.

Яңы клуб

Ҡандра районы үҙәгендә 150 кеше һыйҙырышлы яңы клуб һалынды. Уны һалыу өсөн 447 мең һум аҡса тотолдо.

Клубта тамашасылар залы, киноустановка, библиотека, уҡыу залы, фойе, буфет һәм художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәр өсөн бүлмә бар.

Район үҙәгендәге хеҙмәтсәндәрҙең 1 Май байрамына арналған тантаналы йыйылышы матур итеп йыһазландырылған яңы клубта уҙғарылды.

Ғ. Үлмә[illegible].

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Колхоздарҙы медицина яғынан хеҙмәтләндереү эше яҡшыртылһын

Совет хөкүмәте хеҙмәтсәндәрҙең һаулығын һаҡлау һәм ауырыуҙарға медицина ярҙамы күрһәтеү өлкәһендә ҙур хәстәрлек күрә. Ошо маҡсат менән ауылдарҙа медицина пункттары булдырылған.

Ләкин Баҡалы районы Мостафа ауыл Советындағы медицина пункты мөдире иптәш Роза Арсланова хеҙмәтсәндәрҙең һаулығын һаҡлау өлкәһендә үҙенә тапшырылған был эшкә яуапһыҙ ҡарай. Ул йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы [illegible] тураһында колхозсылар араһында [illegible]лар, лекциялар үткәреүҙе ойошторма[illegible] ауырыуҙарҙы булдырмауға ҡарата [illegible] саралар күрмәй.

Иптәш Арсланова йыш ҡына, эш [illegible]те ваҡытында медпунктта булмай. [illegible]лыҡтан ауырыу колхозсылар уны [illegible] квартираһына барырға мәжбүр булалар. Ҡайһы бер ваҡытта ул килгән ауырыуҙарҙы ҡарау эшен медицина эше [illegible] бөтөнләй таныш булмаған санитарҙы Шәйсолтановаға тапшырып сығып [illegible].

Медпункт көнгә 2—3 сәғәт кенә [illegible] була. Шул уҡ ваҡытта унда күп [illegible] кәрәкле дарыуҙар булмай. Иптәш Арсланова медпункт өсөн бирелгән [illegible] простыня, мамыҡ кеүек әйберҙәрҙе [illegible] квартираһында ғына тота.

Колхозсылар медицина пункты[illegible] эшен яҡшыртыуҙы талап итәләр.

М. Кәримова.

ХРОНИКА

СССР Верховный Советы Президиумы иптәш И. Г. Кабановты, уның [illegible] яуаплы эшкә күсеүе айҡанлы, [illegible] промышленносы Министры вазифаһынан бушатты.

* * *

СССР Верховный Советы Президиумы иптәш Д. В. Ефремовты электр промышленносы Министры итеп билдәләне.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

9 майҙа Башҡорт государство [illegible] һәм балет театрында — УССР-ҙың [illegible]ҙанған артисы, Сталин премияһы лауреаты Азриҡандың һаубуллашыу гастроле — «ПАЯЦЫ» ҺӘМ КОНЦЕРТ.

Рус драма театрында — «КӨНБАЙЫШТАҒЫ СИК».

«Октябрҙә» — «ТЫНЫС КӨНДӘР».

«Салауатта» — иртәнсәк «Б[illegible] ҠАЛА ЕГЕТЕ», кис «ЯНИКА».

«Уралда» — «БЕРЕНСЕ СТАРТ».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа «БЕРЕНСЕ СТАРТ».

Мал аҙығы базаһын нығытайыҡ

Продукт биргән торған общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын тормошҡа ашырыуҙа Башҡортостан колхоздары һәм совхоздары ҙур эш башҡарҙылар. Шулай ҙа мал аҙыҡтары етештереү талапты тәьмин итә алмай әле. Күпселек колхоздарҙа малдар өсөн аҙыҡ базаһын нығытыуға етерлек иғтибар ителмәй. Айырым райондарҙа мал аҙығы культуралары сәсеү пландары йыл һайын үтәлмәй. Тәбиғи болондарҙы, көтөүлектәрҙе яҡшыртыу саралары буйынса бирелгән заданиелар үтәлмәй. Ферма яны һәм болон-көтөүлек сәсеү әйләнештәре насар үҙләштерелә.

Колхоздарҙы эрелтеү айҡанлы мал аҙығы сәсеү әйләнештәрен ҡайтанан ҡарап сығырға кәрәк. Бында сәсеү әйләнештәренең нығытылыуы һәм уның мал аҙыҡтарына булған талапты тәьмин итерлек булыуы күҙҙә тотолорға тейеш.

Был эштә Дәүләкән районы «Новый быт» колхозы өлгө күрһәтә. Колхоз хужалыҡты үҫтереүҙең перспектив планын төҙөгән саҡта ҡышҡы һәм йәйге осорҙа малдар өсөн аҙыҡ талабын иҫәпләне һәм ашатыу нормаларын билдәләне. Бында шулай уҡ мал аҙыҡтары буйынса страховой фонд һалыу, государствоға бесән тапшырыу саралары ла иҫәпкә алынды, хужалыҡтың һутлы, тупаҫ һәм концентрат аҙыҡтарға талабы билдәләнде.

Ошо нигеҙҙә мал аҙыҡтары сәсеү әйләнеше майҙаны булдырылды, малдар һанын государство минимумы һәм өс йыллыҡ план кимәлдәренән юғары итеп үҫтереү саралары билдәләнде. Йәшел массаға булған талапты дөрөҫөрәк итеп билдәләү өсөн йәшел конвейер төҙөлдө, унда йәйге көтөүлек осоронда малдарҙы һәр айҙа йәшел үлән менән тәьмин итеү сараһы ҡаралды. Йәшел конвейер сәсеү әйләнешендә йәшел масса өсөн тамыр аҙыҡтар, ҡабаҡ-ҡауын, бер йыллыҡ һәм күп йыллыҡ үләндәр сәсеү майҙандары билдәләнде.

Бөтә был саралар колхозда общественный малдар һанын государство минимумы һәм өс йыллыҡ план кимәлдәренән юғары итеп үҫтереүгә өлгәшеүгә алып барасаҡ. Иҫәпләүҙәрҙә килеп сыҡҡан мал аҙығының артыҡлығы планлаштырылған йылда мал һанын пландан һәм минимумдан артыҡ үҫтереү мөмкинлеген бирҙе. Мал аҙығын билдәләгәндән һуң, сәсеү әйләнеше проекты төҙөлдө һәм сәсеү әйләнешендәге айырым культуралар майҙаны билдәләнде.

Малдарҙы һутлы аҙыҡтар менән тәьмин итеү өсөн колхозда һигеҙ баҫыулы ферма яны сәсеү әйләнеше индерелә. Ул 242,5 гектар майҙанды алып тора. Ундағы культуралар түбәндәгесә наүбәтләшә: беренсе баҫыуҙа — бесән өсөн тәүге йыл файҙаланыуҙағы үләндәр; икенсе баҫыуҙа — йәшел масса өсөн икенсе йыл файҙаланыуҙағы үлән; өсөнсө баҫыуҙа — арпа, мал аҙығы өсөн ҡабаҡ-ҡауын; дүртенсе баҫыуҙа — мал өсөн тамыр аҙыҡтар; бишенсе баҫыуҙа — силос культуралары; алтынсы баҫыуҙа — картоф; етенсе баҫыуҙа — йәшел көйөнсә ашатыу өсөн бер йыллыҡ үлән һәм силос культуралары; һигеҙенсе баҫыуҙа — күп йыллыҡ үлән менән бергә сәселгән һоло. Бынан тыш, һыйырҙар, вак малдар һәм йылҡыларҙың йәйге лагеро янында йәшел конвейер ойоштороу өсөн кәрәкле күләмдә йәшел масса етештереү маҡсатында тағы ла һигеҙ баҫыулы мал аҙығы сәсеү әйләнеше индерелә. Унда бөртөклө культуралар күберәк сәселә. Ул 293,6 гектар тәшкил итә.

Мал аҙығы сәсеү әйләнештәре баҫыуҙары өсөн тамыр аҙыҡ, картоф, силос һәм башҡа мал аҙығы культуралары үҫтереүгә яраҡлы булған ерҙәр һайланды. Был баҫыуҙар фермаға яҡын урында урынлаштылар. Мал аҙығы сәсеү әйләнештәрендә үҫтерелә торған культураларҙың агротехник талаптары иҫәпкә алынды, культураларҙың наүбәтләшеү схемалары билдәләнде. Бында шулай уҡ бөртөклө культуралар ҙа индерелде. Ул культураларҙы дөрөҫ наүбәтләштереүгә, тупраҡ уңдырышлылығын күтәреүгә, сәсеү планын үтәүгә ярҙам итә.

Мал аҙығы культуралары урожайын күтәреүгә айырыуса иғтибар биреү талап ителә. Былтыр бик күп колхоздар тамыр аҙыҡтарынан юғары урожай алыуға өлгәштеләр. Мәҫәлән, Иглин районы «Путь Ленина» колхозында 2 гектар сөгөлдөрҙөң һәр бер гектарынан уртаса 500-әр центнер, 24 гектар йәшелсәнең һәр бер гектарынан 240-ар центнер урожай алынды.

Мал аҙыҡтары етештереүҙе дөрөҫ ойоштороу уның ныҡлы базаһын булдырыуҙың мөһим шарты булып тора. Партия һәм хөкүмәт колхоздарҙа мал аҙыҡтары туплау буйынса махсус бригада булдырырға тәҡдим итә.

Мал аҙығы әҙерләү бригадалары ойоштороу был эштә колхозсыларҙың яуаплылығын арттыра. Улар мал аҙығы культуралары урожайын күтәреү йәйге һәм ҡышҡы осор өсөн аҙыҡ запасы туплау өсөн тырышып эшләйәсәктәр. Мал аҙыҡтары туплау бригадаһы, баҫыусылыҡ бригадаһы кеүек үк, хеҙмәткә яраҡлы колхозсыларҙан төҙәлә. Был бригадаға ферма яны, болон-көтөүлек сәсеү әйләнештәре, тәбиғи болондар һәм көтөүлектәр беркетелә. Әгәр ҙә колхозда тәбиғи болондар бик күп булһа, ул мал аҙығы туплау бригадаһына ла, шулай уҡ баҫыусылыҡ бригадаһына ла беркетелә. Мал аҙығы туплау бригадаһы составы даими булырға тейеш. Бригада йыл әйләнәһенә эшләй. Яҙ, йәй, шулай уҡ көҙ ҙә ул үҙенә беркетелгән участкаларҙа мал аҙығы культуралары үҫтерә, урожайҙы йыйнай, малдар өсөн тупаҫ аҙыҡтар әҙерләй, силос һала, болондарҙы, көтөүлектәрҙе яҡшыртыу, шулай уҡ мал аҙығы культуралары орлоҡсолоғо менән шөғөлләнә. Ә ҡыш көндәрендә бригада фермаларға мал аҙыҡтары ташый, уларҙы ашатыуға әҙерләй. Шулай уҡ ферма яны участкаларында ҡышҡы агротехник сараларҙы үткәрә. Уның эше, баҫыусылыҡ бригадаһындағы кеүек үк, йыл әйләнәһенә дауам итә. Был бригадаға һәм звеноға етәкселек итеүгә тәжрибәле колхозсылар ҡуйыла, эшсе һәм йәпле тартыу көсө, ауыл хужалығы машиналары, инвентарҙар һәм транспорт средстволары беркетелә.

Мал аҙыҡтары туплау буйынса махсус бригадаларҙың ойошторолоуы эштең был тармағында әйәһеҙлекте бөтөрөү, үҫә барған малсылыҡты талап ителгән аҙыҡтар менән тәьмин итеү өсөн кәрәкле шарттарҙы тыуҙыра.

Колхоздарҙы эрелтеүгә тиклем бындай бригадаларҙы һәр бер колхозда ойоштороу мөмкин булманы. Сөнки вак артелдәрҙә кеше етешмәне, мал аҙығы сәсеү әйләнештәре индереүгә ер етешмәне. Ә хәҙер, колхоздарҙы эрелтәкәндән һуң, бындай бригадаларҙы һәр бер колхозда төҙөргә мөмкин.

Мал аҙығы туплау бригадаһына беркетелгән колхозсыларҙың һаны төрлөсә була. Ул хужалыҡта мал аҙығы туплау эшенең күләменә бәйле булып тора. Мәҫәлән, Дәүләкән районы «Новый быт» колхозында 536 гектар майҙанда мал аҙығы культуралары үҫтерелә торған ике сәсеү әйләнеше бар. Баҫыу эштәрен механизациялаштырыу менән был сәсеү әйләнештәрендә эш башҡарыуҙы тәьмин итеү өсөн бында мал аҙығы туплау бригадаһына 40 — 50 кеше беркетеү талап ителә. Ә Благовещен районының болон-көтөүлек һәм мал аҙығы сәсеү әйләнештәре 1296 гектар тәшкил иткән Жданов исемендәге колхозында бригадаға 100-гә тиклем колхозсы беркетеү талап ителә.

Бригада күләмен билдәләгәндә эшкә яраҡлы һәр бер кеше өсөн билдәләнгән өлгө норманан сығып эш итергә мөмкин. Өлгө норма буйынса эшкә яраҡлы һәр бер кешегә тамыр аҙыҡтар, ҡауын-ҡарбуҙлар үҫтерелә торған 0,7 — 1 гектар ер беркетелә. Мәҫәлән, бригадаға беркетелгән сәсеү әйләнешендә 60 гектар майҙанда тамыр аҙыҡтар һәм ҡабаҡ-ҡауындар үҫтерелһә, бригада составында 42 — 60 кеше булдырыла.

Алдынғы колхоздарҙың тәжрибәләре мал аҙығы туплау бригадаларының колхоз производствоһын киңәйтеүгә ярҙам итеүҙәрен күрһәтә. Бындай колхоздарҙа мал аҙығы базаһы ныҡый, общественный малсылыҡ йыллам үҫә.

Мал аҙығы туплау бригадаһын ойоштороу баҫыусылыҡ бригадаһынан яуаплылыҡты алып ташламай. Баҫыусылыҡ сәсеү әйләнештәрендә мал аҙығы һәм силос культуралары үҫтереү, үҙенә беркетелгән болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса баҫыусылыҡ бригадалары яуаплы булып торалар. Тиҙ ошо шарттарҙа ғына мал аҙыҡтары туплауҙа әйәһеҙлеккә юл ҡуйылмаясаҡ.

Агроном М. Ғәлиев.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-23.

НО 1958 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25 000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

Ҡыҙыл Башҡортостан

1951 йыл
№ 90 (8807)
9
МАЙ
шаршамбы

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө Ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

БӨГӨН—СОВЕТ ХАЛҠЫНЫҢ ЕҢЕҮ КӨНӨ.

Бынан алты йыл элек совет халҡы һәм уның Армияһы Германия империализмы өҫтөнән бөйөк тарихи еңеүгә өлгәштеләр.

Йәшәһен героик совет халҡы һәм уның данлы Ҡораллы Көстәре!

Йәшәһен беҙҙең һөйөклө юлбашсыбыҙ һәм полководецебеҙ, Советтар Союзы Генералиссимусы иптәш СТАЛИН!

ССР Союзы Хәрби Министренең ПРИКАЗЫ

9 май 1951 йыл — № 64 — Мәскәү ҡалаһы

Иптәштәр һалдаттар һәм сержанттар!

Иптәштәр офицерҙәр һәм генералдар!

Немец-фашистик баҫҡынсыларға ҡаршы Бөйөк Ватан һуғышын еңеүле тамамлау көнөнән алты йыл үтте. Был һуғышта совет халҡы һәм уның Ҡораллы Көстәре, коммунистар партияһы, беҙҙең тәрән аҡыллы юлбашсыбыҙ һәм бөйөк полководец иптәш Сталин етәкселегендә, дошман өҫтөнән тарихи еңеүгә өлгәште, беҙҙең социалистик Ватаныбыҙҙың бойондороҡһоҙлоғон яҡлап алып ҡалды, Европа халыҡтарын фашистик ҡоллоҡтан ҡотҡарҙы.

Һеҙҙе герман империализмы өҫтөнән данлы еңеүҙең алты йыллығы менән тәбрикләйем һәм ҡотлайым.

Еңеү Көнөн билдәләп **приказ бирәм:**

Бөгөн, 9 майҙа беҙҙең Ватаныбыҙҙың башҡалаһы— Мәскәүҙә, союзный республикаларҙың башҡалаларында, шулай уҡ Калининградта, Львовта һәм герой-ҡалаларҙа: Ленинградта, Сталинградта, Севастополдә һәм Одессала утыҙ артиллерия залптары менән салют бирергә.

Йәшәһен совет халҡы һәм уның героик Армияһы!

Йәшәһен беҙҙең туған Совет Хөкүмәтебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы бөйөк Ленин — Сталин партияһы!

Беҙҙең һөйөклө юлбашсыбыҙ һәм полководецебеҙ, Советтар Союзы Генералиссимусы иптәш Сталинға дан!

Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәштәрҙә һәләк булған геройҙарға мәңгелек дан!

ССР Союзы Хәрби Министре
Советтар Союзы Маршалы ***ВАСИЛЕВСКИЙ***

ССР Союзы Хәрби-Диңгеҙ Министренең ПРИКАЗЫ

9 май 1951 йыл — № 36 — Мәскәү ҡалаһы

Иптәштәр матростар һәм һалдаттар, старшиналар һәм сержанттар!

Иптәштәр офицерҙәр, адмиралдар һәм генералдар!

Беҙҙең Тыуған илебеҙ Бөйөк Ватан һуғышын еңеү менән тамамланыуының алтынсы йылын билдәләй. Коммунистар партияһы, бөйөк юлбашсы һәм гениаль полководец иптәш Сталин тарафынан етәкселек ителгән совет халҡы һәм уның Ҡораллы Көстәре Германия империализмы өҫтөнән бөтә донъя тарихи еңеүенә өлгәштеләр, беҙҙең Совет Тыуған илебеҙҙең намыҫын, азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон яҡлап алып ҡалдылар һәм Европа халыҡтарын фашистик ҡоллоҡтан ҡотҡарҙылар.

Һеҙҙе фашистик Германияны еңеүҙең алтынсы йыллығы менән тәбрикләйем һәм ҡотлайым.

Йәшәһен героик совет халҡы һәм уның данлы Хәрби-Диңгеҙ флоты!

Йәшәһен беҙҙең Совет хөкүмәтебеҙ!

Йәшәһен һуғыштарҙа сынығып сыҡҡан совет халҡының авангарды — бөйөк Ленин — Сталин партияһы!

Йәшәһен беҙҙең гениаль юлбашсыбыҙ, уҡытыусыбыҙ һәм полководецебеҙ Советтар Союзы Генералиссимусы иптәш **Сталин!**

Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәштәрҙә һәләк булған геройҙарға мәңгелек дан!

ССР Союзы Хәрби-Диңгеҙ Министре
Адмирал ***ЮМАШЕВ***

Совет халҡының бөйөк Еңеү Көнө

Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре, бөтә совет халҡы менән, бөтә прогрессив кешелек донъяһы менән берлектә бөгөн 9 май—бөйөк Еңеү Көнөн байрам итәләр. Бынан 6 йыл элек совет халҡы һәм уның данлыҡлы Ҡораллы Көстәре кешелектең яуыз дошманы — герман фашизмын тар-мар иттеләр.

Ғәйәт ҙур тарихи әһәмиәткә эйә булған был еңеүҙе ойоштороусы һәм рухландырыусы бөйөк Сталин радио аша сығыш яһаны һәм **«Тыуған илебеҙҙең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо хаҡына беҙ биргән ҙур ҡорбандар, һуғыш барышында беҙҙең халҡыбыҙ кисергән иҫәпһеҙ күп мәхрүмлектәр һәм ғазаптар, тылда һәм фронтта Ватан хаҡына бирелгән киҫкергәнешле хеҙмәт, — әрәмгә китмәне һәм дошманды тулы еңеү менән тамамланды»,** — тип билдәләне.

Совет халҡы герман фашизмын, унан һуң япон империализмын тар-мар итеү менән кешелекте, культураны һәләкәттән ҡотҡарып алып ҡалды. Һәм ул был тарихта тиңдәше булмаған ҡаты көрәштең бөтә ауырлыҡтарын үҙ елкәһендә үткәрҙе. Совет кешеләре, Совет иленең ҡурҡыу белмәҫ батыр воиндары кешелек тарихының онотолмаҫ данлы биттәрен яҙҙылар.

Совет иле ауыр һуғыштарҙа сынығып, уның халҡының политик-мораль берҙәмлеге үҫте. Үҙҙәренең бөйөк Ватандарының бойондороҡһоҙлоғо өсөн, гүзәл аш өсөн көрәшеүсе совет кешеләре тыныс төҙөлешкә күскәс тә ҙур фиҙакәрлек менән эшләүҙә дауам иттеләр һәм итәләр.

Совет халҡының һуғыш әҙемтәләрен бөтөрөү, варварҙар тарафынан емертелгән ҡалаларҙы төҙөкләндереү, халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү юлында һалған хеҙмәттәре тиңһеҙ бөйөк. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планы срогынан алда уңышлы үтәлде. Ә пландың иң мөһим заданиелары байтаҡ арттырып үтәлделәр. Беҙҙең илебеҙ продукция етештереүҙең һуғышҡа тиклемге кимәленә өлгәшеү генә түгел, уны байтаҡ үтеп китте. 1950 йылда промышленность продукцияһы, 1940 йылға ҡарағанда, 73 процентҡа күберәк етештерелде. Бындай ҙур үҫештең тик социализм илендә генә булыуы мөмкин.

Империалистик илдәр, берәнсе наубәттә Америка, Англия империалистәре ҡоторонып яңы һуғышҡа әҙерләнәләр. Улар ҡоралланыу артынан ҡыуалар. СССР халыҡтары һуғыш теләмәйҙәр, улар тыныслыҡ яғында. Илебеҙҙә Сталинград, Куйбышев, Каховка гидроэлектростанциялары, Волга-Дон каналы һәм башҡа ошондай тыныс төҙөлеш ҡоролмаларының барлыҡҡа килтерелеүе быныҡ асыҡ миҫалы булып тора.

Америка-Англия империалистәре азатлыҡ һөйөүсе илдәрҙе үҙҙәренең колонияларына итергә теләйҙәр. Улар ҡоторонып өсөнсө бөтә донъя һуғышына әҙерләнәләр. Империалистик агрессорҙар үҙҙәренең бысраҡ табандары менән Кореяға баҫып индеәр һәм Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы флагы аҫтына йәшеренеп был кескәй илгә ҡаршы ҡанлы һуғыш алып баралар. Азатлыҡ һөйөүсе Корея халҡы үҙенең бойондороҡһоҙлоғон быуаса күрелмәгән геройлыҡ менән яҡлай һәм уның гүзәл эшенең еңәсәгендә шик юҡ. Бөтә прогрессив кешелектең, совет халҡының шул иҫәптән республикабыҙ хеҙмәтсәндәренең симпатияһы үҙ азатлығы өсөн аяуһыҙ көрәш алып барыусы героик Корея халҡы яғында.

Һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы ҡеүәтле тыныслыҡ лагеры тора. Азатлыҡ һөйөүсе халыҡтар тыныслыҡ эшен үҙ ҡулдарына алалар һәм уны аҙағына тиклем яҡлауға әҙерҙәр. Тыныслыҡ эше ныҡый һәм ул еңер. Сөнки был ҡеүәтле лагерҙың башында Совет хөкүмәте, коммунистар партияһы һәм бөйөк Сталин тирәһенә туплаған совет халҡы тора.

Социалистик илдең хеҙмәтсәндәре тыныслыҡ эшен үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәре, патриотик эштәре менән нығыталар. Халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство заемын сығарыу тураһында СССР хөкүмәтенең ҡарары бөтә урында ҙур шатлыҡ һәм рух күтәренкелеге менән ҡаршыланды. Совет кешеләре был яңы заемды ҙур ғорурлыҡ менән тыныс төҙөлеш заемы тип атанылар. Һәм заемға яҙылыу бөтә урындарҙа ла берҙәм һәм ойошҡанлыҡ менән бара. Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре яңы заем сығарылғандан һуңғы дүрт көн эсендә генә 300 миллион һумдан артыҡ күләмдә яңы заемға яҙылдылар. Был үҙған йыл подписканың суммаһынан күп артыҡ.

Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре Еңеү Көнөн хеҙмәт фронтында яңы өлгәшеүҙәр менән билдәләйҙәр. Күп кенә промышленность предприятиелары ағымдағы йылдың үткән дүрт айы эсендә биш айлыҡ заданиене үтәүгә өлгәштеләр. Социалистик баҫыу эшсәндәре яҙғы сәсеүҙе юғары агротехник кимәлдә һәм ҡыҫҡа сроктарҙа үткәреү өсөн көрәшәләр. Йомағужа, Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил һәм башҡа күп кенә районлар иртә культураларҙы сәсеүҙе тамамланылар.

Совет халҡы Еңеү Көнөн политик һәм хеҙмәт активлеге шарттарында, тыныслыҡ эшенә ҙур вклаттар индереп билдәләй. Биш йыллыҡ планды үтәүҙәге гүзәл уңыштар беҙҙе яңынан-яңы еңеүҙәргә рухландыра. Совет халҡы большевиктар партияһы, бөйөк Сталин етәкселегендә ышаныслы аҙымдар менән алға, коммунизмға бара.

Йәшәһен тыныслыҡ байрағын юғары тотоп барыусы совет халҡы һәм беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе ойоштороусы һәм рухландырыусы бөйөк **Сталин!**

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

1951 йылдың I кварталында республика колхозларында общественный малсылыҡты үҫтереү һәм һаҡлап алып ҡалыу буйынса райондарҙың социалистик ярышы йомғаҡтарын ҡарап сыҡҡандан һуң Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы **ҡарар иттеләр:**

1. 1951 йылдың I кварталында общественный малсылыҡты үҫтереү һәм һаҡлап алып ҡалыу буйынса райондарҙың социалистик ярышында Зианчура районын (район Советы исполкомы председателе иптәш Латипов, ВКП(б) райкомы секретары иптәш Әхмәдиев, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Погребельный, баш зоотехник иптәш Юлашев, баш ветврач иптәш Романова) еңеүсе тип танырға һәм уға Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын тапшырырға.

2. Бәләбәй, Ҡаныра һәм Бишбүләк районларының общественный малсылыҡты үҫтереү һәм һаҡлап алып ҡалыу буйынса яҡшы эшләүҙәрен билдәләп үтергә.

1951 йылдың I кварталында СССР халыҡ хужалығын үҫтереү буйынса государство планының үтәлеше йомғаҡтары тураһында

СССР Министрҙәр Советы эргәһендәге Үҙәк Статистика Управлениеһының белдереүе

1951 йылдың I кварталында промышленностең һәм ауыл хужалығының үҫеүе һәм тауар әйләнешенең йәйелдерелеүе түбәндәге мәғлүмәттәр менән характерлана:

I. Промышленносҙә производство планының үтәлеше

Валовой продукция етештереүҙең квартал планы промышленность буйынса, тотош алғанда, 100,2 процентҡа үтәлде. Валовой продукция етештереү планы айырым министерстволар тарафынан түбәндәгеса үтәлде.

	1951 йылдың I кварталында квартал планының үтәлеш проценте
Ҡара металлургия министерствоһы	99
Төҫлө металлургия министерствоһы	98
Күмер промышленносе министерствоһы	100,4
Нефть промышленносе министерствоһы	99
Электр станциялары министерствоһы	103
Химия промышленносе министерствоһы	103
Электр промышленносе министерствоһы	102
Связь средстволары промышленносе министерствоһы	102
Ауыр машиналар төҙөү министерствоһы	99,7
Автомобиль һәм трактор промышленносе министерствоһы	103
Станоктар төҙөү министерствоһы	101
Машиналар һәм приборҙар төҙөү министерствоһы	100
Төҙөлөш һәм юл машиналары төҙөү министерствоһы	103
Транспорт машиналары төҙөү министерствоһы	103
Ауыл хужалығы машиналары төҙөү министерствоһы	103
СССР Төҙөлөш материалдары промышленносе министерствоһы	99
СССР Урман промышленносе министерствоһы	89
Ҡағыҙ һәм ағас эшкәртеү промышленносе министерствоһы	100
СССР Еңел промышленность министерствоһы	101
СССР Балыҡ промышленносе министерствоһы	108
СССР Ит һәм һөт промышленносе министерствоһы	98
СССР Аҙыҡ промышленносе министерствоһы	102
СССР Мамыҡсылыҡ министерствоһы	97
Юл эштәре министерствоһының промышленность предприятиелары	95
СССР Һаулыҡ һаҡлау министерствоһының промышленность предприятиелары	104
СССР Кинематография министерствоһының промышленность предприятиелары	105
Союзный республикаларҙың Урындағы промышленность министерстволары һәм урындағы яғыулыҡ промышленносе министерстволары	101
Промысла кооперацияһы	102

1951 йылдың I кварталында СССР-ҙың бөтә промышленносендә валовой продукция 1950 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда 18 процентҡа үҫте.

II. Ауыл хужалығы

Ағымдағы йылда совхоздар, машина-трактор станциялары һәм колхоздар яҙғы баҫыу эштәрен, 1950 йылдағыға ҡарағанда, техника менән тағы ла байыҡтырылған хәлдә башланылар.

Уҗым ашлыҡтарын иҙ тырматыу һәм өҫтәмә аҙыҡландырыу үҙған йылдағыға ҡарағанда, байтаҡ ҙурыраҡ майҙанда үткәрелде. Илдең көньяҡ райондарында башаҡлы культуралар сәсеү уңышлы тамамланды. Урта полоса райондарында яровой культуралар сәсеү йәйелдерелде. Быйыл яровой ашлыҡ культуралары сәсеү ҡыҫҡараҡ срокта үткәрелә: 1951 йылдың 5 майына яровой ашлыҡ культуралары, 1951 йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда, биш миллион ярым гектарға арттырыраҡ сәселде.

СССР-ҙың Европа өлөшөнөң ялан һәм урман-ялан райондарының колхоздары, лесхоздары, баҫыу һаҡлаусы урман үҫтереү станциялары һәм совхоздар 1951 йылдың 1 майына баҫыу һаҡлаусы ағастар ултыртыуҙы һәм ағас орлоғо сәсеүҙе 700 мең гектар майҙанда, йәғни үҙған йылдың 1 майына ҡарағанда, 55 мең гектарға күберәк үткәрҙеләр.

III. Тауар әйләнешен йәйелдереү

1951 йылдың I кварталында совет сауҙаһын артабан йәйелдереү дауам иттерелде. Халыҡҡа **государство һәм кооператив сауҙаһы** буйынса тауарҙар, 1950 йылдың I кварталына ҡарағанда, сағыштырма хаҡтарҙа 22 процентҡа күберәк һатылды. Ошоноң менән бергә аҙыҡ-түлек тауарҙары һатыу 19 процентҡа һәм промышленность тауарҙары һатыу 25 процентҡа артты.

Совет хөкүмәтенең һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының ҡарары буйынса 1951 йылдың 1 мартынан башлап государствоның аҙыҡ-түлек һәм массовый ҡулланыу промышленность тауарҙарына ваҡлап һатыу хаҡтарын яңынан, иҫәп буйынса дүртенсе тапҡыр арзанайтыу үткәрелеүе государство һәм кооператив сауҙаһында тауарҙар һатыуҙы байтаҡ арттырыуға килтерҙе.

1951 йылдың март айында һәр кеп һайын тауарҙар һатыу, 1951 йылдың февраль айына ҡарағанда, сағыштырма хаҡтарҙа уртаса 19 процентҡа артты. Шуның менән бергә колбаса изделиелары һатыу 20 процентҡа, балыҡ продукттары һатыу 15 процентҡа, мал майы—27 процентҡа, һөт һәм һөт продукттары һатыу —33 процентҡа, йомортҡа—75 процентҡа, киҫе-мамыҡ туҡымалары һатыу — 31 процентҡа, йөн туҡымалар һатыу — 17 процентҡа, тегелгән изделиелар һатыу—34 процентҡа, күн аяҡ кейемдәре һатыу—31 процентҡа, резина аяҡ кейемдәре һатыу—36 процентҡа, өҫлө һабын һатыу—50 процентҡа, быяла, фарфор һәм фаянс һауыт-һабалары, мебелдәр һәм радиоприемниктәр һатыу бер ярым тапҡырҙан да ашыуыраҡҡа, кеҫә һәм ҡул сәғәттәре һатыу 2 тапҡырға тиҫ әйтерлек, велосипедтар һәм мотоциклдар һатыу 5 тапҡырҙан ашыуыраҡҡа артты.

Массовый ҡулланыу тауарҙарына государствоның ваҡлап һатыу хаҡтарын кәметеү арҡаһы 1951 йылдың мартында, 1951 йылдың феврале менән сағыштырғанда, колхоз баҙарҙарында хаҡтар төштө.

СССР Министрҙәр Советы эргәһендәге Үҙәк Статистика Управлениеһы.

Совет халкының бөтә донъя әһәмиәтле тарихи еңеүе

Совет халкы, уның менән бергә бөтә прогрессив кешелек быйыл 9 майҙа фашистик Германияны Еңеү Көнөн билдәләйҙәр.

Бынан 6 йыл элек, ролю эшә халкка мөрәжәғәт менән сығыш яһап, иптәш Сталин былай тине: «Хәҙер беҙ, Германияны тар-мар итеү тарихи көнө, Германия империализмы өҫтөнән беҙҙең халкыбыҙҙың бөйөк еңеү көнө килеп етте, тип тулы нигеҙ менән әйтә алабыҙ.

Тыуған илебеҙҙең азатлығы һәм бәйһеҙлеге хакына беҙ бирған ҙур корбандар, һуғыш барышында беҙҙең халкыбыҙ кисергән иҫәпһеҙ күп мохтажлыктар һәм ғазаптар, тылда һәм фронтта Ватан хакына бирелгән киҫерәнгелеп хеҙмәт,— бушка китмәне һәм дошманды тулы еңеү менән тамамланды».

[illegible]

...дошмандың армияларын алдыртып һәм көсһеҙләндереп, гитлерселәрҙең авантюристик «йәшен тиҙлегендәге һуғыш» пландарын өҙәләр һәм Дондағы Ростов һәм Тихвин янында, Ҡырымда һәм Мәскәү янында немец-фашист армияһына бер-бер артлы удар яһанылар. Совет Армияһы Мәскәү янындағы тарихи һуғышта, гениаль сталинсе планды тормошка ашырып, гитлерселәрҙе тар-мар итте һәм айырым урындарҙа 400 километрҙан да күберәккә көнбайышка алып ташланы.

Һуғыштың был этабының стратегик һөмөтәтарын баһалап, иптәш Сталин былай тип күрһәтте: хәҙер һуғыштың яҙмышы иҫкәрмәһеҙҙән һөжүм итеү моменте кеүек үтеп китеүсе моменттар менән түгел, ә даими хәрәкәт итеүсе факторҙар: тылдың ныклығы, армияның мораль рухы, дивизияларҙың һаны һәм сифаты, армияның ҡоралланышы, армияның начальниктар составының ойоштороу һәләтлеге менән хал ителә.

Гитлерселәрҙең Советтар Союзын бер удар менән еңеү һәм бер ярым-ике айҙа Уралға тиклем етеү пландарының емерелеүе Америка-Англия империалистарын Советтар Союзын юк итеүгә һәҙи көмөндә уны һуғыштан һуң еңел табыш булып әйләнерлек итеп йомшартыуға булған өмөттәрен бөтөрҙө.

Халктарҙың киң массаларының ҡыҫымы аҫтында Гитлергә ҡаршы коалицияға инергә мәжбүр булған АКШ һәм Англияның реакцион круттары үҙҙәренең СССР-ға ҡаршы көнәлтелгән политикаларын дауам иттерҙеләр. Был политика беренсе нәүбәттә гитлерсе Германияға ҡаршы бер-бер һуғышта Советтар Союзының тере һәм материаль көстәрен кәметеү өсөн Европала икенсе фронт асыуҙы юрамал һуҙыуға ҡайҙалды.

Советтар Союзы гитлерсе Германияға ҡаршы азатлык һуғышына тотынғас, фашизм ҡоллоғона төшкән халыктар ике фронт араһында ҡыҫылған Германия бик тиҙ тар-мар ителер, тип көттөләр. Ләкин АКШ-тың реакцион көстәре башка нәмә тураһында хыялландылар. Ул вакытта әле сенатор булған Трумэн ачыҡтан-асыҡ рәүештә былай тип белдерҙе: «Әгәр ҙә беҙ Германияның еңеүен күрһәк, ул вакытта Россияға ярҙам итергә кәрәк, әгәр ҙә инде Россия еңһә, ул вакытта Германияға ярҙам итергә кәрәк. Һәм шулай итеп, улар мөмкин тиклем күберәк үлтерешһендәр».

Совет халкының иң яуыз дошманы Черчилль тарафынан етәкселек ителгән Англияның реакцион круттары ла шундай уҡ политиканы үткәрҙеләр.

Европала икенсе фронт асыуҙы юрамал һуҙыу политикаһы фашистик Германияға үҙенең бөтә төп көстәрен совет-герман фронтында тоторға мөмкинлек бирҙе. Европала икенсе фронт булмауҙан файҙаланып, 1942 йылдың йәйендә гитлерселәр совет-герман фронтының төньяк-көнбайыш йүнәлешендә ҙур һөжүмдә башлай алдылар, был һөжүмдә совет ғәскәрҙәре Сталинград янында һәм Төньяк Кавказда туктаттылар. Фашистик Германия икенсе фронттың булмауын 1943 йылдың йәйендә лә файҙаланды, ул Курск районында һөжүм итеп ҡараны.

Ләкин Англия һәм АКШ реакцион круттарының Советтар Союзын гитлерсе Германия менән бергә-бер һуғышта көсһеҙләндереүгә булған иҫәптәре юкка сыкты. Гитлерселәр тарафынан 1942 йылдың йәйендә башланған һөжүм 330 меңлә немец-фашист армияһын Сталинград янында ҡамау һәм тар-мар итеү менән тамамланды, ҡамалған ғәскәрҙәрҙең өстән бер өлөшө пленга алынды. Совет Армияһы тарихи Сталинград һуғышында үҙенең үҫә барған оҫталығын, немец-фашист ғәскәрҙәренең Сталинград янында хәрәкәт итеүсе төп группировкаларын ҡамап алыуҙың гениаль сталинсе планын гүзәл рәүештә тормошка ашыра белеүен генә түгел, бәлки совет халкының героик хеҙмәте менән барлыкка килтерелгән совет хәрби техникаһының үҫә барған ҡеүәтен дә демонстрацияланы.

Бөтә халк ярҙамына таянып, Совет Армияһы дошман өҫтөнә миллионлаған бомбалар, мина һәм снарядтар яуҙырҙы, һуғышка меңәрләгән танктар һәм самолеттар индерҙе. Совет Армияһының ҡеүәте өҙлекһеҙ үҫә барҙы.

1943 йылдың йәйендә гитлерселәр Курск районында яңы һөжүм башланылар. Гитлерселәр һуғышка ҙур һанда хәрби техника: авиация, танктар һәм үҙе йөрөй торған орудиелар индерҙеләр. Ләкин немец-фашист армияһының был һөжүме уңышһыҙлыкка осраны. Совет Армияһы гитлерселәрҙең атакаларын кире ҡаҡты һәм, үҙе һөжүмгә күсеп, немец-фашист ғәскәрҙәрен тар-мар итте һәм Днепр аръяғына алып ташланы. «Сталинград янындағы һуғыш, — тип күрһәтә иптәш Сталин, — немец-фашист армияһының көнә бөтөүен алдан күрһәткән булһа, Курск янындағы һуғыш уны һәләкәт алдына килтереп ҡуйҙы» (И. Сталин, «Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында», 5-се баҫма, 114-се бит).

1944 йыл Совет Армияһының хәл иткес еңеүҙәр йылы булды. Был йылда Совет ғәскәрҙәре гитлерсе Германияға сталинсе ун удар яһанылар, улар һөҙөмтәһендә совет ғәскәрҙәре фашист баҫкынсыларҙы беҙҙең илебеҙ сиктәренән ҡыуып сығарҙылар. Һуғышты фашистик Германия территорияһына күсерҙеләр һәм Европаның ҡол ителгән халыктарына туранан-туран ярҙам ҡулын һуҙҙылар.

АКШ һәм Англияның идара итеүсе круттары Советтар Союзын көсһеҙләндереүгә булған үҙҙәренең иҫәптәренең емерелеүен, Советтар Союзының союзниктар ярҙамынан башка, үҙ көстәре менән генә гитлерсе хәрби машинаһы тар-мар итә, бөтә Германияны оккупациялай һәм Францияны азат итә аласағын күргәс кенә үҙҙәренең ғәскәрҙәрен Төньяк Францияға төшерҙеләр.

Ләкин Европала икенсе фронт асылғандан һуң да гитлерселәр үҙҙәренең бөтә төп көстәрен һуғыштың яҙмышы хәл ителгән совет-герман фронтында тотоуҙарын дауам иттерҙеләр.

1945 йылдың башында Совет Армияһы фашистик Германияның әсенә үк һөжүм итә башланы. Был һөжүм менән совет ғәскәрҙәре гитлерсе Германияны тулы һәм тамам еңеүҙе яҡынайттылар һәм гитлерселәрҙең Арденна районында һөжүмдәре һөҙөмтәһендә ауыр хәлгә эләккән Америка-Англия ғәскәрҙәрен тар-мар ителеүҙән ҡотҡарҙылар.

Иптәш Сталиндең Берлин өҫтөнә Еңеү Байрағын элеүгә саҡырыуы менән рухланған совет воиндары герман фашизменең һуңғы терәгенә ынтылышлы һөжүм иттеләр һәм 2 майҙа Берлинде тулыһынса алдылар, рейхстаг өҫтөнә Еңеү Байрағын эленәр.

8 майҙа гитлерсе башкомандованиеның вәкилдәре Берлинда капитуляция актына ҡул ҡуйҙылар. Фашистик Германияны еңеүҙең бөйөк көнө килде.

Совет Армияһы, гитлерсе Германияға ҡаршы һуғышта үҙенең тарихи азатлык миссияһын үтәгәндән, Көнбайышта донъя агрессияһының усағын бөтөргәндән һуң, үҙенең еңеүле ҡоралын икенсе бөтә донъя һуғышында фашистик Германияның төп союзнигы булған империалистик Японияға ҡаршы юнәлтте. Япон империалистарының төп удар көсөн — Квантун армияһын тар-мар итеп, совет ғәскәрҙәре империалистик Японияны капитуляция актына ҡул ҡуйыуға мәжбүр иттеләр. Шуның менән Көнсығышта донъя агрессияһының усағы бөтөрөлдө.

Фашистик Германияға һәм империалистик Японияға ҡаршы Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышы азатлык миссияһын үҙ өҫтөнә алған совет халкының еңеүе менән тамамланды. Был бөтәһенән дә элек совет обществоһы һәм государство ҡоролошоноң еңеүе булды. Октябрь революцияһы тыуҙырған социалистик ҡоролош беҙҙең халкыбыҙға һәм армиябыҙға бөйөк һәм еңелмәҫлек көс бирҙе.

Совет обществоһының мораль-политик берҙәмлегенә, халктар дуҫлығына һәм йәшәү көсө биреүсе совет патриотизмына таянып, Ватан һуғышының гүзәл азат итеү характеры менән рухланып совет кешеләре тылда бөйөк хеҙмәт подвигтары һәм фронтта мәңге һүнмәҫ боевой подвигтар күрһәттеләр.

Социалистик Тыуған илде яҡлауға большевиктар партияһы етәкселегендә беҙҙең илебеҙҙең башында бөйөк рус халкы торған бөтә халыктары күтәрелде. Рус халкының Совет хөкүмәте политикаһына тәрән ышаныуы фашизмде тарихи еңеүҙә тәьмин иткән хәл иткес көс булды.

Большевиктар партияһының тарихи хеҙмәте бына шунан тора. Һуғышка тиклемге йылдарҙа большевиктар партияһы беҙҙең илебеҙҙе актив оборонаға бөтә яҡлап әҙерләне. Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә совет халкы үҙенең илен һуғыштың материаль ихтыяжларын ҡәнәғәтләндереү өсөн кәрәкле булған бөтә нәмәне бирә алырлыҡ ҡеүәтле индустриаль-колхоз державаһына әүерелдерҙе. Бөйөк Ватан һуғышы көндәрендә большевиктар партияһы фашист баҫкынсыларына ҡаршы бөтә халк көрәшен рухландырыусы һәм ойоштороусы булды.

Бөйөк Ватан һуғышында совет халкының еңеүе Совет Ҡоралды Көстәренең еңеүе, сталинсе хәрби фәндең еңеүе булды. Һуғыш Совет Армияһы — беҙҙең замандың беренсе класлы армияһы икәнлеген күрһәтте.

Совет халкының гитлерсе Германияға һәм империалистик Японияға ҡаршы һуғышта еңеүе И. В. Сталиндең стратегик гениһенең еңеүе булды.

Совет халкының герман фашизмен һәм япон империализмен еңеүенең бөтә донъя күләмендә тарихи әһәмиәте бар. Фашистик государстволар блогын тар-мар итеү һәм уны тар-мар итеүҙә Советтар Союзының хәл иткес роле социалистик система менән капиталистик система араһындағы көстәр сағыштырмаһын социализм файҙаһына үҙгәртте. Европала фашизмде тар-мар итеү һөҙөмтәһендә Польша, Чехословакия, Венгрия, Румыния, Болгария һәм Албания халк демократик илдәре булып әүерелделәр, Германия Демократик Республикаһы барлыкка килде. Империалистик Японияны тар-мар итеү демократик Вьетнам республикаһын, хәҙерге көндә Америка интервенттарына ҡаршы героик көрәш алып барыусы Корея Халк-Демократик Республикаһын төҙөүгә килтерҙе. Ҡытайҙа милли-азатлык хәрәкәтенең тарихи еңеүе, Ҡытай Халк Республикаһының төҙөлөүе фашистик государстволар блогын тар-мар итеүҙең иң мөһим һөҙөмтәһе булып тора.

Икенсе бөтә донъя һуғышынан һуң капиталистик илдәрҙең үҙҙәрендә лә серьез үҙгәрештәр булды. Күп кенә капиталистик илдәрҙә коммунистар һәм эшселәр партияларының йоғонтоһо бик ныҡ үҫте, уларҙың һаны артты, уларҙың ойошмалары ныҡыны. Колонияларҙа милли-азатлык хәрәкәте үҫә. Шулай итеп, АКШ һәм Англия империалистарының фашистик Германия көсө менән Советтар Союзына удар яһауға һәм капиталистик илдәрҙә революцион һәм демократик хәрәкәтте тар-мар итеүгә һәм шуның менән капитализмдең дөйөм хәлен ныҡытыуға булған иҫәптәре өҙөлдө.

Гитлерсе Германияны һәм империалистик Японияны тар-мар иткәндән һуң капитализмде «ҡотҡарыусылар» ролен АКШ империалистары үҙҙәренә алдылар. Хәҙер улар асыҡтан-асыҡ баҫып алыу курсын үткәрәләр, был курс донъяға Америка империализменең хакимлеген урынлаштырыуға, яңы бөтә донъя һуғышын башлап ебәреүгә иҫәпләнгән.

Америка империалистары Кореяла һуғыш башланылар, улар Кореяның азатлык һөйөүсе халкын Уолл-стрит монополистарының ҡолдары яһарға, Ҡытай Халк республикаһына һәм Советтар Союзына ҡаршы һуғышыу өсөн уңайлы плацдармды баҫып алыуға ынтылалар. Ләкин Америка банкирҙарының баҫып алыу пландары бер-бер артлы еңелеүгә осрай.

Һуғыш лагерена ҡаршы ҡеүәтле тыныслыҡ лагеры тора. Донъя халыктары һуғышты теләмәйҙәр һәм тыныслыҡты яҡлап алып ҡалыу яғында торалар. Тап бына шуға күрә лә халыктарҙың тыныслыҡ өсөн хәрәкәте шул тиклем киң һәм ҡеүәтле. Тыныслыҡ көстәренең башында үҙенең хөкүмәте, большевиктар партияһы, иптәш Сталин тирәһенә тығыҙ тупланған совет халкы бара.

Совет халкы өсөн һуғыштан һуңғы йылдар тыныс ижади хеҙмәт йылдары булды. Ленин — Сталин партияһы тарафынан рухландырылған совет кешеләре СССР-ҙың халк хужалығын һуғыштан һуң аяҡка баҫтырыу һәм үҫтереү планын үтәнеләр һәм арттырып үтәнеләр. Волгала һәм Донда, Днепрҙа һәм Аму-Дарьяла коммунизмдең бөйөк ҡоролоштарын төҙөй башланылар, тәбиғәтте үҙгәртеүҙең сталинсе планын уңышлы рәүештә тормошка ашыралар.

Совет государствоһы тыныслыҡ һәм халыктар араһында хеҙмәттәшлек политикаһын тайпылышһыҙ үткәреп килә, был политиканы донъялағы бөтә ябай кешеләр яҡлайҙар. Тыныслыҡ яҡлаусылар хәрәкәте һәр көн һайын үҫә һәм ныҡый, яңынан-яңы миллионлаған кешеләр бөйөк Сталиндең «әгәр ҙә халыктар тыныслыҡты һаҡлап ҡалыу эшен үҙ ҡулдарына алһалар һәм уны аҙағына тиклем яҡлаһалар, тыныслыҡ һаҡлап ҡалыныр һәм ныҡытылыр», тигән һүҙҙәре менән рухланып Америка-Англия һуғыш утын тоҡандырыусыларына ҡаршы сығалар, тыныслыҡ һәм демократия байрағы аҫтына баҫалар.

Совет халкы Еңеү Көнөн яңы политик һәм производство күтәренкелеге обстановкаһында билдәләй. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты үтәүҙәге гүзәл уңыштар социалистик Ватандың экономик ҡеүәтен тағы ла күберәк ныҡыттылар. Бөйөк төҙөлөштәрҙә эштәр киңәйгәндән-киңәйә бара. Героик большевиктар партияһы тарафынан етәкселек ителгән совет халкы үҙенең аҡыллы юлбашсыһы һәм уҡытыусыһы, беҙҙең еңеүҙәребеҙҙең ойоштороусыһы һәм илһамсыһы иптәш Сталин юлбашсылығында ышаныслы рәүештә алға, коммунизмға бара.

Генерал-майор **И. Зубков.**

Ҡыҙыл Армияның үҙәк музейы. Советтар Союзы Геройы К. Я. Самсонов музейҙа булыусыларға үҙенең Берлинда рейхстаг өҫтөнә Еңеү Байрағын элеүе тураһында һөйләй.

С. Лоскутов фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Профсоюз ойошмаларына партия етәкселеген ҡырҡа яҡшыртырға

Профсоюздар беҙҙең государство тормошонда бик мөһим урын тоталар. Улар бөтә эшселәрҙе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе берләштереүсе, хеҙмәтсәндәр массаһын партия менән бәйләүсе үҙ эшмәкәрлек массовый ойошмалар. Профсоюздар — коммунизм мәктәптәре улар. Профсоюздарҙың көсө партия етәкселегендә, партияның етәкселегенән башка профсоюздар эшенең булыуы ла мөмкин түгел.

Ә Благовещен районында партия ойошмаларының профсоюздарға етәкселек итеүҙәре менән эш бөтөнләй башҡаса тора. Районда профсоюз ойошмалары күп кенә, улар ундағы эшселәрҙе, хеҙмәткәрҙәрҙе берләштерергә һәм предприятиелар, учреждениелар алдында торған мөһим бурыстарҙы хәл итергә саҡырылғандар. Ләкин ВКП(б) райкомының (секретаре иптәш Будрицкий) профсоюз ойошмаларына етәкселек итеү эшен баһалап еткермәүе арҡаһында райондағы күп кенә профсоюз ойошмалары ҡәнәғәтләнерлек эшләмәйҙәр.

Унда профсоюз ойошмалары производство планын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн барған социалистик ярышҡа насар етәкселек итәләр, производстволағы етешһеҙлектәргә ҡаршы көрәште йомшаҡ ойошторалар, эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәргә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыуға, торлаҡ һәм культура-тормош шарттарын яҡшыртыуға тейешле иғтибар бирмәйҙәр.

Миҫалға машиналар төҙөү заводын алырға мөмкин. Был завод үҙенең етештереү мөмкинлектәрен тулыһынса файҙаланмай, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү планын үтәмәй һәм шул арҡала государствоға ҙур юғалтыуҙар килтерә, заводта эш нормаларын үтәй алмаған эшселәрҙең һаны һаман да бик ҙур, брак сығарыуға ҡаршы көрәш насар ойошторолған. Заводтың профсоюз ойошмаһы һәм завод администрацияһы социалистик ярышҡа яҡындан тороп етәкселек итмәйҙәр, иң яҡшы сифатлы продукция эшләп сығарыу, сырьёға һәм материалдарға экономия яһау, коллектив стахановсы хеҙмәт ойоштороу өсөн ярыштың яңы төрҙәрен һәм юлдарын индереү өҫтөндә эшләмәйҙәр.

Заводтағы бөтә бригадаларҙың тик 10 процентында ғына иң яҡшы сифатлы продукция эшләп сығарыу өсөн ярыша. Коллектив стахановсы хеҙмәт ойошторолған бер генә бригада, цех йәки участка ла юҡ. Профессиялар буйынса иң яҡшы токарь, иң яҡшы слесарь һәм башҡалар исеме алыу өсөн ярыш ойошторолмаған. Ярыш ойоштороуҙа формализмға юл ҡуйыла. Эшселәрҙең индивидуаль йөкләмәләренең үтәлеше тикшерелмәй, уларға йомғаҡ яһалмай. Ярыштың һөҙөмтәләрен күрһәткес таҡталарына яҙыу юлы менән эшселәргә танытып барыу булдырылмаған. Рационализаторлыҡ һәм уйлап табыусылыҡ эше йәйелдерелмәгән.

Профсоюз эшенең шулай насар тороуына ҡарамаҫтан, заводтың партия бюроһы (секретаре иптәш Пауров) профсоюз ойошмаһына етәкселек итмәй, профсоюз активы менән һис бер эш алып бармай. 1950 йылда профсоюз работниктары менән бер генә кәңәшмә лә, семинар ҙа үткәрелмәгән.

Райондың предприятиеларында һәм МТС-тарында бик күп резервтар файҙаланылмай, алдынғыларҙың һәм производство новаторҙарының тәжрибәләре эшселәр араһына таратылмай, күргәҙмә ярҙам [illegible] баһалап еткерелмәй. Шул арҡала [illegible] хеҙмәт етештереүсәнлеге бик түбән. [illegible] новка МТС-ында эш вакытының 25 проценте буш тороу менән үтә, трак[illegible] тәр смена нормаларын үтәмәйҙәр. [illegible] дың МТС-тары 1950 йылда колхоз[illegible] нән төҙөгән договорҙар буйынса йөкләмәләрен үтәмәнеләр. Ә [illegible] ойошмалары был мөһим мәсьә[illegible] ситтә торалар. Күбәлә тракторсы [illegible] Бусеевтең башланғысы тураһында [illegible] тарҙың күпселек трактористарҙың ишеткәндәре лә юҡ. Предприят[illegible] инженер Ковалевтың эш методын [illegible] водствоға индереү буйынса бер [illegible] эшләмәйҙәр, тиергә ярай.

Профсоюздарҙың район комитет[illegible] бик насар эшләйҙәр, улар түбәнге [illegible] маларға етәкселек итмәйҙәр. Баш[illegible] һәм урта мәктәп работниктары профсо[illegible] ның район комитеты мәктәптәрҙе [illegible] яҡшыртыу буйынса саралар [illegible] Уҡыусыларҙың өлгәшеүе түбән, бер [illegible] та икенсе йылға ҡалыусыларҙың [illegible] бик ҙур, уҡытыусыларҙың белем [illegible] камиллаштереү менән бер кем дә [illegible] май.

Политик-ағартыу учреждениеларын[illegible] профсоюз ойошмалары был учрежд[illegible] ләрҙең эшенә контроллек итеүҙән [illegible] лай алыҫлашҡандар. Сауҙа ойошмал[illegible] дағы профсоюз ойошмалары магазин[illegible] рек, столовой, пекарняларҙың эшен [illegible] шыртыу хәстәрлеген күрмәйҙәр. [illegible] ойошмаларҙа социалистик ярыш [illegible] ролмаған, һис бер төрлө политик [illegible] эше алып барылмай.

Райондың бөтә профсоюз ойошма[illegible] ла ла йыйылыштар һирәк үткәрел[illegible] идея ярынан түбән кимәлдә булалар [illegible] кит һәм үҙ-үҙенде тәнкитләүгә иғти[illegible] бирелмәй. Профсоюз ойошмалары[illegible] етәксе работниктары эшселәр йыйылыш[illegible] тарында политик темаларға доклад[illegible] менән сығыш яһамайҙар.

Райондың профсоюз ойошмалары [illegible] мәтсәндәр араһында массовый-полит[illegible] алып бармайҙар, культура-ағартыу [illegible] бик түбән кимәлдә тора, клубтарҙы[illegible] тә эш тик танца үткәреүгә генә [illegible] рып ҡалдырыла.

Благовещен районының профсоюз ойош[illegible] маларында булған был етешһеҙлектә[illegible] бөтөрөү өсөн партия ойошмалары [illegible] серьез ярҙам ойошторорға — профсо[illegible] ойошмаларының эшенә даими [illegible] политик йүнәлеш биреп барырға, [illegible] кадрҙар менән ныҡытырға, йыйылыш[illegible] сығарған ҡарарҙың үтәлешенә [illegible] урынлаштырырға, профсоюз ойошма[illegible] етәкселегенә яңы һайланған йәш [illegible] араһында тәрбиә эше алып барырға, [illegible] өсөн семинарҙар үткәрергә, профсо[illegible] ойошмаларының эшмәкәрлеген иң [illegible] производство мәсьәләләрен хәл [illegible] йүнәлтергә тейештәр.

ВКП(б)-ның Благовещен райкомы про[illegible] союздарға етәкселек итеү партия ойо[illegible] ларының мөһим бурысы булыуын [illegible] партияға киң масса менән тығыҙ бәй[illegible] нешә торорға ярҙам итеүсе профсоюзды [illegible] һалап еткермәү партия эшендә ҙур ет[illegible] һеҙлектәрҙең береһе икәнен [illegible] тейеш.

Б. Федоров.

Массовый-политик эште беҙ нисек ойошторҙоҡ

Эрелтелгән колхозды ойоштороу-хужалыҡ яғынан ныҡытыуҙа массовый-политик эш иң көслө ҡорал булып тора. Шуға күрә беҙ үҙебеҙҙең колхозда массовый-политик эште тағы ла киңерәк йәйелдереү сараһын күрәбеҙ. Был эште системалы рәүештә алып барыу өсөн беҙ ай һайын план төҙөйбөҙ, уны партия йыйылышына ҡуйып раҫлайбыҙ һәм планда күрһәтелгән һәр бер сараны үтәргә тырышабыҙ.

Яҙғы сәсеүгә әҙерлек осоронда партия ойошмаһының бюро ултырышында агитколлектив һәм редколлегия составтарын раҫланыҡ, бригадаларҙа һәм фермаларҙа партгруппалар төҙөнөк.

Хәҙер колхозда стена газетаһы регуляр рәүештә сығарылып барыла, бригадаларҙа һәм фермаларҙа боевой листоктар сығарыла. Агитаторҙар өсөн аҙна һайын семинар үткәрелә. Семинарҙарҙа агитаторҙар нәүбәттәге темаға доклад тыңлайҙар, методик кәңәштәр алалар һәм үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар.

Беҙҙең колхозда һәр кесаҙна һайын бригада йыйылыштары үткәрелә. Унда партбюроның бригадаға беркетелгән члендәре лә ҡатнашалар. Бригада йыйылыштары колхозда хеҙмәтте ойоштороу [illegible] яҡшыртыуға, эшкә һалҡын ҡараусыларҙы тәрбиәләүгә ҙур ярҙам иттеләр. Мә[illegible] лән, Х. Ғайсарова, С. Юлышева, М. С[illegible] лихова иптәштәр былтыр хеҙмәт көнө м[illegible] нимумын үтәмәгән булһалар, быйыл и[illegible] де улар колхоз эшендә актив ҡатнаша[illegible] һәм эш нормаларын арттырып үтәйҙәр.

Партия ойошмаһының инициатива[illegible] менән колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында 1951 хужалыҡ йылына социал[illegible] тик йөкләмә алынды. Ошо йөкләмә[illegible] [illegible]ҙары нигеҙендә айырым бригадалар һәм фермалар араһында социалистик яры[illegible] йәйелдерелде.

Былар бөтәһе лә беҙҙең партия ой[illegible] маһының массовый-политик эште [illegible] шыртыу буйынса яһаған тәүге аҙым[illegible] һөҙөмтәләре булып торалар. Тәүге уң[illegible] тарҙы арттырыу һәм уларҙы арттыр[illegible] ҡытыу өсөн беҙҙең коммунистар һәм [illegible] тинһыҙ актив тағы ла ныҡышмал[illegible] эш алып барасаҡ.

К. Зарипов.

Учалы районы Сталин исеме[illegible] эрелтелгән колхоздың партия ой[illegible] маһы секретары.

„Кыҙыл Башкортостан" материалдары буйынса

„Ағиҙел пароходствоһында техника насар файҙаланыла"

Ошондай баш менән «Ҡыҙыл Башкортостан» газетаһының 1951 йылда сыҡҡан 72-се номерында Ағиҙел йылға пароходствоһында техниканың насар файҙаланыуы тураһында хәбәр баҫылып сыҡҡайны. Хәбәрҙә баҫылып сыҡҡан факттар, урында тикшерелеп, тулыһынса дөрөҫ, тип табылдылар

Ағиҙел пароходствоһы политик бү[illegible] нең хәбәр итеүенсә, пароходствоның [illegible] селеге һәм политик бүлеге хәбәрҙә [illegible] һәтелгән етешһеҙлектәрҙе 1951 йыл[illegible] навигацияла бөтөрөүгә йүнәлдерелгән [illegible] ралар билдәләне.

ЯҢЫ ЗАЕМҒА БЕРҘӘМ ЯҘЫЛЫП, КОММУНИЗМДЕҢ БӨЙӨК ТӨҘӨЛӨШТӘРЕН ТИҘЛӘТӘБЕҘ

ҺАҠЛЫҠТАРЫБЫҘ — ТЫНЫСЛЫҠ ЭШЕН ҠЫҒЫТЫР

Бүҙәк районы Сәрмәсән ЛЗС-ы механизаторҙары яңы заем сығарыу тураһында СССР Министрҙар Советының ҡарарын шатлыҡ менән ҡаршыланылар.

— Государствоға үтескә биргән һаҡлыҡтарыбыҙ, — тине участка агролесомелиораторы иптәш В. Карцова, — социалистик ауыл хужалығын артабан механизациялаштырыуға, көн-күрешебеҙҙе яҡшыртыуға йүнәлтелә. Быны беҙ үҙ ЛЗС-ыбыҙҙың миҫалында күрәбеҙ. Бында был урында ҡасандыр буш ялан ине. Ә хәҙер ҡарағыҙ, унда яңы эшселәр поселогы барлыҡҡа килде. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ремонт мастерскойы, контора, мунса, столовой, торлаҡ йорттар төҙөлдө. Быйыл электр станцияһы, дөйөм торлаҡ һәм водопровод төҙөләсәк. Беҙ яңы заемға ҙур теләк менән яҙылып, яңы төҙөлөштәрҙе тиҙләтеүгә актив булышлыҡ итергә теләйбеҙ.

Механизаторҙар ҡарарҙы хуплап береһе артынан икенсеһе сығып һөйләне.

Алдынғы тракторист, сәсеүҙә смена нормаһын 150 — 160 процентҡа үтәүсе иптәш Әхияр Ғәбдрәхимов сығышында шулай тине:

— Бөтә совет халҡы менән бергә, беҙ, механизаторҙар, илебеҙҙең тағы ла ҡеүәтлерәк һәм көслөрәк булыуын теләйбеҙ. Шуға күрә мин яңы заемға ысын күңелемдән яҙылам. Сөнки заемға биргән беҙҙең һаҡлыҡ аҡсаларыбыҙ һөйөклө илебеҙҙең ҡеүәтен тағы ла күберәк күтәрер, бөтә донъяла тыныслыҡ эшен ҡыҙытыр.

ЛЗС-тың бөтә механизаторҙары ла бер сәғәт эсендә үк заемға тулыһынса яҙылып бөттөләр.

Н. Дәүләтов.

Подписка суммаларын аҡсалата индерәләр

Хәйбулла. (Телеграф аша). Районның хеҙмәтсәндәре СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство заемына ҙур берҙәмлек һәм ойошҡанлыҡ менән яҙылалар.

Әбеш ауыл Советы «Һаҡмар» колхозы колхозсылары бер сәғәт ваҡыт эсендә заемға яҙылып бөттөләр һәм подписка суммаларын тулыһынса индерҙеләр. Шулай уҡ был ауыл Советының «Победа», «Берлек» колхоздарында, Пәнтеш ауыл Советының «Красная звезда» колхозында, «Ҡыҙыл шишмә», «Таналыҡ», «Красный Октябрь» колхоздарында ла заемға яҙылыу ойошҡанлыҡ менән үтә.

Р. Шәфиҡова.

ПАТРИОТИК КҮТӘРЕНКЕЛЕК

Бәләбәй ҡалаһы һәм районы хеҙмәтсәндәре үҙ хеҙмәт һаҡлыҡтарын государствоға үтескә юғары патриотик күтәренкелек менән бирәләр. Машиналар төҙөү заводында, педучилищела, ауыл хужалығы механизаторҙары мәктәбендә, лесхозда, ЛЗС һәм башҡа коллективтарҙа, Знаменка ауыл Советында заемға яҙылыу айырыуса ойошҡанлыҡ менән үтте. Знаменка ауыл Советы хеҙмәтсәндәре подписка суммаһының байтаҡ өлөшөн шунда уҡ аҡсалата индерҙеләр.

И. Николаенко.

Художник В. Викторов эшләгән, Госфиниздат тарафынан сығарылған плакат.
ТАСС фотохроникаһы.

Колхозсылар взностарын срогынан алда индерәләр

Республиканың Баймаҡ, Бөрйән, Бөзәяҙ, Саҡмағош, Хәйбулла, Ҡырмыҫҡалы, Маҡар, Илеш, Шишмә, Борай райондарында колхозсылар араһында яңы заемды урынлаштырыу ғәйәт ҙур политик күтәренкелек менән дауам итә. Был райондарҙың колхоз крәҫтиәндәре, илебеҙҙә коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрен тиҙләтеүгә булышлыҡ итеү йөҙөнән, государствобыҙға үтескә йөҙәрсә мең һум һаҡлыҡтарын бирҙеләр. Улар заемға берҙәм яҙылыу менән бер үк ваҡытта, подписка суммаларын срогынан алда индереүҙе ойоштороп, күп райондарҙың колхозсыларына өлгө күрһәтәләр. Мәҫәлән, Баймаҡ районының колхозсылары подписка суммаларының 79, Бөрйән — 51, Бөзәяҙ — 44, Саҡмағош — 40, Хәйбулла — 38, Маҡар — 33 процентын индерҙеләр инде. Ҡырмыҫҡалы, Борай, Илеш, Шишмә райондарында ла подписка суммаларын срогынан алда түләү киң йәйелдерелә.

Совет патриотизме

Совет халҡы, коммунистар партияһы һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин етәкселегендә, СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең биш йыллыҡ планын уңышлы үтәп сыҡты. Һөҙөмтәлә илебеҙ үҙенең экономикаһын һәм культураһын артабан ҡеүәтле күтәреүгә өлгәште. Бөйөк Сталин инициативаһында Советтар Союзында коммунизмдең гигант гидротехник ҡоролмалары төҙөлә. Совет кешеләре бындай грандиоз төҙөлөштәргә хеҙмәттәре менән генә түгел, бәлки үҙ һаҡлыҡтарын государствоға үтескә биреп тороуҙары менән дә актив ҡатнашлыҡ итәләр.

Беҙҙең Яңы Балтас ауыл Советы хеҙмәтсәндәре коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрен тиҙләтеүгә йүнәлдереләсәк яңы заемдың сығарылыуын шатлыҡлы ваҡиға итеп ҡаршыланы һәм уға берҙәм яҙылды. Ауыл Советы күләмендә урынлаштырылған заем суммаһы илле биш мең һумға барып етә. Колхозсылар тәүге көндә үк утыҙ мең һумын аҡсалата индерҙеләр. 75 йәшлек ҡарт колхозсы Сафуан Балыҡов үҙенең һаҡлыҡтарынан государствоға дүрт йөҙ һум бирҙе һәм аҡсаһын шунда уҡ индерҙе.

Колхозсылар яңы заемға шулай берҙәм яҙылып һәм взностарын срогынан алда индереп, совет патриотизмының гүзәл өлгөләрен күрһәтәләр.

М. Юлдашев,
Саҡмағош районы Яңы Балтас ауыл Советы председателе

Ҙур күтәренкелек менән

Йомағужа районы хеҙмәтсәндәре халыҡ хужалығын үҫтереү заемына подписка башланыуын ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алдылар. Тәүге көндәрҙә үк яңы заемға яҙылыу ҙур активлыҡ менән башланды.

Максим Горький исемендәге ауыл хужалығы артеле члендары 47210 һумлыҡ заемға яҙылып, 35 мең һумын аҡсалата индерҙеләр. Колхозсы иптәш Бирюков 750 һумға, иптәш Иштыҡов 700 һумға яҙылып, шунда уҡ түләп ҡуйҙылар.

Заемға яҙылыу башҡа колхоздарҙа ла уңышлы бара. Иртүбәк ауыл Советында ла подписка 41475 һумлыҡ суммаһы тошҡил итә. Уның 25 мең һумы аҡсалата индерелгән.

Ә. Исхаҡов.

КОЛЛЕКТИВТЕҢ БЕРҘӘМЛЕГЕ

Өфө. СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство заемы МТС һәм ер органдары работниктары профсоюзының өлкә комитеты коллективы члендары араһында уңышлы урынлаштырылды.

Бында 30 минут эсендә коллектив члендары бөтәһе лә заемға яҙылып бөттөләр.

СМЕНА НОРМАҺЫН ҮТӘҮ ҺӘМ ЯҒЫУЛЫҠҠА ЭКОНОМИЯ ЯҺАУ—ҺӘР БЕР ТРАКТОРИСТЕҢ НАМЫҪ ЭШЕ

Алдынғы сафта

Раевка бөртөклө ашлыҡ совхозы механизаторҙары Иван Бунеев саҡырыуы буйынса юғары урожай үҫтереп алыу өсөн ярышҡа ҡушылып, бик мөһим йөкләмәләр алғайнылар.

Совхоздың Линда бүлексәһендә эшләүсе трактористарҙан Косачев һәм Кочедыков иптәштәр смена нормаларын арттырып үтәп, ярышта иң алдынғы сафта баралар. Улар 4 көн эсендә 2431 гектар майҙанда туңға һөрөлгән ерҙе тырматып сыҡтылар. Май байрамы хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫып, иптәш Кочедыков ЧТЗ тракторы менән һәр көн һайын 96 гектар ашлыҡ сәсеп, өс көн эсендә 292 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Ә иптәш Косачев С—80 тракторы менән көн һайын 130 — 145 гектар ашлыҡ сәсеп, 342 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Механизаторҙарҙың бына шулай намыҫ менән һәм тырышып эшләүҙәре арҡаһында совхоздың Линда бүлексәһе 1222 гектар майҙанда иртә культуралар сәсеүҙе 6 эш көнөндә тамамланы.

Ғ. Ғәйнетдинова.

Трактористка Дауытова смена заданиеһен арттырып үтәй

Күндрәк МТС-ының трактор бригадалары араһында йәйелдерелгән социалистик ярышта иптәш Вахитов етәкселек иткән бригада алдынғылыҡты алып бара. Был бригада механизаторҙары «Яңы юл» колхозын хеҙмәтләндерә.

МТС-тың алдынғы трактористкаһы, БАССР Верховный Советы депутаты иптәш Гөлйыһан Дауытова социалистик ярыш инициаторы булып тора. Ул ДТ — 54 тракторы менән һәр сменала 38 гектар урынына 55—65 гектар ашлыҡ сәсә. Уның өлгөһөндә эшләгән трактористарҙан Дауыт Вахитов, Бәкер Ғәбитов, Муллануры Сөйәрғолов иптәштәр ҙа смена нормаларын арттырып үтәйҙәр.

Механизаторҙарҙың тырыш хеҙмәте һөҙөмтәһендә «Яңы юл» колхозы иртә культуралар сәсеүҙе агротехник сроктарҙа үткәреүгә өлгәште. Алдынғылыҡты яулап алған иптәш Вахитов бригадаһына МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды.

Ә. Әүхәдиев.

Йыллыҡ план биш көндә үтәлде

Тәбиғәтте үҙгәртеүҙә урман хужалыҡтарының бурысы ҙур һәм почетлы. Шаран лесничествоһының работниктары был бурысты намыҫ менән үтәү өсөн көстәрен аямайҙар.

Былтыр беҙ 37 гектар урынына 117 гектар майҙанда ағас ултырттыҡ. Шуның 90—92 проценты яҡшы үҫешләнде. Бигерәк тә оя тәртибендә ултыртылған имәндәр тиҙ үҫтеләр. Үткән йылғы уңышлыҡтарҙы ныҡытыу өсөн беҙ ҡыш һәм ҡыш көндәрендә үк әҙерлек алып барҙыҡ. Быйыл ултыртыласаҡ ағастар өсөн ер, орлоҡ әҙерләнде. Урман ҡараусылар, колхоздарҙағы ағас ултыртыу звеноларының етәкселәре менән ун көнлөк техминимум үткәрелде.

Яҙғы лесничество работниктары ҙур әҙерлек менән ҡаршы алдылар. Ағас ултыртыу эшен биш көндә тамамлап, йыллыҡ планды арттырып үтәнеләр. Илле гектар урынына илле һигеҙ гектар майҙанда имән, ҡарағай, ҡайын ултыртылды, 2,5 гектар майҙанда питомник булдырылды.

Лесничество үҙ планын үтәп кенә ҡалманы, ә күп кенә колхоздарға ла ярҙам итте: питомниктан ағас бирҙе, ултыртырға яраҡлы ағастарҙы урмандарҙан һайлап алыуҙа булышты.

Ағас ултыртыу менән генә эш теүәлләнмәне. Үткән йылдарҙа ултыртылған ағастарҙы ҡарарға, тәрбиәләргә кәрәк ине. Ике йөҙ гектар майҙанда һәр ағастың төбө йомшартылды. Ҡороған ботаҡтар һындырып алынды, ауырыу ағастар урынына таҙа ағастар ултыртылды. Лесничество работниктарының тырыш хеҙмәте арҡаһында беҙ быйыл да Туймазы урман хужалығы лесничестволары араһында беренселекте алдыҡ.

Был уңыштарға өлгәшеүҙә агит-массовый эштең дөрөҫ ҡуйылыуы ҙур ярҙам итте. Биш көнгә бер звеноларҙың, урман ҡараусыларҙың үтәлгән эштәре тикшерелеп барылды һәм алдынғы звеноға «иң яҡшы урман ҡараусыһы» тигән флажок бирелде.

Локтева Нина, Семенова Мария һәм Тәхбәтшина Мәһинә иптәштәр Май алды ярышында көндәлек нормаларын 200 — 300 процентҡа үтәнеләр. Урман ҡарауысы Сәмиғуллин Кәшфулла звеноһы ун көнлөк эште өс көндә үтәп, 6 гектар ағас ултыртты.

Хәҙер беҙ пландан тыш ағас ултыртабыҙ, питомник әҙерләйбеҙ һәм ултыртылған ағастарҙы тулыһынса үҫтереү өсөн тырышабыҙ.

М. Хәмзин,
Шаран лесничествоһының лесниге.

Емеш-еләктән мул урожай алыу өсөн

Беҙҙең колхозда емеш-еләк баҡсаһын үҫтереүгә, тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелә. Коллективлашыуҙың беренсе йылдарында уҡ беҙҙә емеш-еләк баҡсаһы һалынғайны. Бына шул ваҡыттан бирле мин һәр ваҡыт баҡсасылыҡта эшләп киләм. Тәүге йылдарҙа баҡса 1,5 гектар майҙанда ғына ойошторолғанлыҡтан, мин был эштә яңғыҙым ғына эшләнем. Баҡсаның майҙаны йылдан-йыл арттырыла килеп, хәҙер инде 12,6 гектарға етте. Баҡсала 1,3 гектар алма ағастары, 4,6 гектар ер еләктәре, 2,4 гектар ҡурай еләктәре һәм башҡа емештәр үҫтерелә. Шулай уҡ питомник тә бар.

Үҙған йылда баҡсанан 40 мең һум доход алынды. Быйыл беҙҙең бригадабыҙ члендары баҡсанан 60 мең һумдан да кәм булмаған доход алырға һүҙ бирҙеләр.

Быға тиклем беҙҙең баҡсала виноград үҫтерелмәне. Быйыл 0,5 гектар майҙанда виноград үҫтереләсәк. Быны өсөн етерлек тиклем виноград үҫентеләре әҙерләнде.

Ә. Вахитов,
Балтас районы Жданов исемендәге колхоздың емеш-еләк баҡсаһы бригадиры.

ЯҒЫУЛЫҠТЫ АРТЫҠ ТОТОНАЛАР

Баҫыу эштәрендә яғыулыҡҡа һәм майлау материалдарына экономия яһау тракторҙар эштәренең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыуҙа төп шарттарҙың береһе булып тора. Ләкин Ҡандра МТС-ында бындай экономия өсөн көрәш тейешенсә ойошторолмаған. Бында баҫыу эштәренең тик тәүге биш көнөндә генә 4 тонна самаһы яғыулыҡ артыҡ тотолған. Иптәш Городик етәкселек иткән трактор бригадаһында яғыулыҡ материалы айырыуса күп расходланған. Был бригада «Правда» колхозын хеҙмәтләндерә. Ул 1953 килограмм яғыулыҡты норманан тыш файҙаланған. «Большевик» колхозын хеҙмәтләндергән иптәш Ғәлиуллин бригадаһында яғыулыҡты артыҡ тотоноу 1153 килограмм, иптәш Ғабдуллин бригадаһында 514 килограмм тәшкил итә.

Яғыулыҡ материалын артыҡ тотоноуҙа төп сәбәптәрҙең береһе тракторҙың тулы ҡеүәтен файҙаланып еткермәүҙән тора. Мәҫәлән, был МТС-та СТЗ—НАТИ тракторына, 3 сәскес тағыу урынына, 2 сәскес тағып йөрөтәләр. Ҡайһы бер бригадаларҙа С—80 тракторына тик 16 тырма ғына тағыла. Молотов исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән трактор бригадаһы бригадиры иптәш Батыршин быны тағылмалар етешмәү менән аңлатырға теләй.

Учетчиктар трактористарҙың яғыулыҡты тотоноуы тураһында учет ҡағыҙҙарына яҙыуҙы көнендә үткәрмәйҙәр. Ә бригадирҙар был эште тикшермәйҙәр.

МТС-та хатта яғыулыҡ һәм майлау материалдарын түгеү-ҡойоу, әрәм итеү факттары ла бар. Мәҫәлән, иптәш Мөхәмәтшин етәкселек иткән бригада тракторисы иптәш Хәйруллин картерҙе ямаҡһыҙ йөрөгән. Һөҙөмтәлә унлағы бөтә май материалы ағып бөткән һәм подшипник иргән. Шуға арҡала был трактор 2 тәүлек эшләмәй ултырҙы.

Ҡандра МТС-ы етәкселәре яғыулыҡ һәм майлау материалдарына экономия яһау өсөн механизаторҙар араһында социалистик ярышты киң йәйелдерергә тейештәр.

С. Мәликов.

Иван Бунеев өлгөһөндә

Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеевтең эш методына ныҡлы эйә булыу минең төп бурысым булып тора. Яҙғы баҫыу эштәре башланып китеү менән үк мин үҙ эшемдә шул методты ҡуллана башланым. Башта ҡыйынырак булды. Сөнки, тәжрибә аҙыраҡ ине әле. Пыш ҡына трактор простой яһай торғайны. Тулы килеш сәғәт графигы менән эшләр өсөн бөтә агрегаттың аныҡ эшләүенә ирешергә кәрәк булды.

Һуңғы ваҡыттарҙа сәғәт графигы менән эшләү хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә мөмкинлек бирҙе. Смена нормаһы арттырып үтәлә, яғыулыҡҡа байтаҡ экономия яһала. Мәҫәлән, ун эш көнөндә мин үҙемдең яҙғы осор өсөн бирелгән эш нормамды арттырып үтәнем. Был осор өсөн план 147 гектар ине, минең иҫәпте хәҙер 200 гектарҙан артыҡ эшкәртелгән ер бар. Ә яҙғы баҫыу эштәре тамамланғанға тиклем был һан тағы ла артасаҡ. Ошо арала 270 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаным. Был бөтә бригада яһаған экономияның 30 процентын тәшкил итә, тигән һүҙ.

М. Кәримов,
Учалы МТС-ының тракторисы.

ЕҢЕҮСЕЛӘР ҠАЛАҺЫ

Мәскәү — Сталинград поезы үҙенең һуңғы станцияһына барып етер ваҡытта вагондарҙағы репродукторҙарҙа музыка яңғыра, һәм дикторҙың ғорур тауышы яңғырай:

— Поезд ике тапҡыр герой ҡалаға килә...

Өҙөклөмәй ҡаланың емерек йорттары, улар араһындағы күтәргес бейек крандар бер-бер артлы тороп ҡалалар, һәм поезд станцияға килеп туҡтай. Перрондан сығыу менән герой-Сталинградтың тәүге күренеше күҙ алдына баҫа. Элекке гүзәл вокзал емерек. Ләкин унда хәҙер ҡыҙыу төҙөлөш бара. Контейнерҙа тултырылған кирбестәрҙе күтәргес кран төҙөлөүсе бинаның өҫтөнә күтәрә. Унда ла, һулда ла шулай уҡ эш ҡайнай. Биш-алты ҡатлы йорттарҙың ослайып-ослайып торған емерек стеналары күренә. Улар ҙа йәшәү өсөн яраҡлы бер генә нәмә лә юҡ. Улар бөтә ҡалала шулай, бөтә урында емерек йорттар бар. Сөнки гитлерсы фашистар бер генә таҙа йортто ла ҡалдырмағандар. Герой ҡаланың батыр һаҡсылары өҫтөнә ҡалаһыҙ ут яуҙырып, гүзәл ҡаланы ниһәйәтә тиклем емерткәндәр. Бында промышленность предприятиеларының, ҡала хужалығының бөтәһе лә, торлаҡ фондының 85 проценты емерелгән ине.

Ләкин хәҙер ҡала йәшәй. Ул көрәшә, төҙөкләндерелә, яңыра. Вокзал янында уҡ Сталин музейы, аяҡҡа баҫтырылған главпочтамт, тимер юл управлениеһы... Емерек йорттар араһында яңылары, элеккегә ҡарағанда, ҙурыраҡ һәм гүзәлерәктәре төҙөлгән. Уларҙы ла хәҙер күп, бик күп. Ә урамдарҙа тоймалы менән һәм картәләнеп бинаҡларҙы төҙөлә. Ҡаланың элекке әрәмәлекле йорттары урынына хәҙер иңмәлары киң, таҙа урамдар. Тыҡрыҡтар киңәйтелә һәм төҙ итеп төҙөлә.

Бына Үҙәк универмаг. Уның подвалында бер ваҡыт фельдмаршал Паулюс ҡуйылған ине. Хәҙер уны иҫкә алыусы ла юҡ. Тик универмаг ҡаршыһындағы кинлек — Көрәштә һәләк булған геройҙар майҙаны ғына был турала ҙур иҫтәлек һаҡлай. Бында хәҙер ҙур темп менән драма театры бинаһын төҙөйҙәр, бынан иҫке тыҡрыҡ урынына һуҙылған киң һәм гүзәл урам башланып китә. Ул оҙон. Йорттары бөтөнләй яңы, дүрт биш ҡатлы, бер конструкция менән нәфис итеп эшләнгәндәр. Был урамда күптән түгел генә булып үткән ҡанлы ҡыйралыштың эҙе лә юҡ хәҙер. Уны төҙөүселәр ҙа, ул йорттарҙа йәшәүселәр ҙа тыныс тормош өсөн, һуғышты булдырмау өсөн фиҙакәр хеҙмәт итеп көрәшәләр. Шуға күрә был яңы, әле бер йәш тә йәшәп өлгөрмәгән урамды улар Тыныслыҡ урамы тип атанылар.

Тыныслыҡ урамының аръяҡ башында төҙөлөштәр әле бик күп. Уларҙың береһе өҫтөндә бархыттан тегелгән ҡыҙыл байраҡ елферләй. Ул ташсы Виталий Рудницкий бригадаһының төҙөлөш майҙанында. Стахановсы хеҙмәттең юғары өлгөләрен биреп эшләү өсөн бирелгәйне ул.

— Хәҙер тағы ла яҡшыраҡ эшләйбеҙ, дуҫтар! — тине ташсы Кривозубов иптәш уны алғанда. — Байраҡ исемен, намыҫын һаҡларға кәрәк.

Байраҡ янында эшләүсе йәш эшселәр йорттоң бишенсе ҡатын дүрт көн эсендә һалып бөтөрөргә йөкләмә алдылар. Был һүҙ — гвардеецтарҙың атака алдынан айт итеүҙәре менән бер ине, һәм атака башланды. Байраҡ йөрөтөүселәр, үҙе менән договор төҙөшкән күренекле ташсы Сукуренков бригадаһы менән ярышып, тәүге көндә үк 16 мең кирбес һалдылар.

Бындай гүзәл батырлыҡ еңеүселәр ҡалаһын аяҡҡа баҫтырыусылар араһында иңге йолаға әйләнгән. Һәр бер төҙөлөштә шундай гүзәл батырлыҡ!

Сталинград — ул батырҙар ҡалаһы. Унда батырҙар сыныға, батырлыҡ тыуа, еңеүгә ниғеҙ һалына, һәм бөтәһе лә бөйөк юлбашсы исеме, уның тәрән аҡыллы етәкселеге менән бәйләнгән. Царицын обороһы, Сталинград эпопеяһы, бөгөнгө еңеү — былар бөтәһе лә ошо герой-ҡалала булған хәл.

Беҙҙең күп көрәштәр менән яулап алған Еңеү көнөбөҙ 9 майҙа килде. Ләкин был еңеү уңай әлегерәк 1942 йылдың аҙ йәйендә, һалҡын көрәштә Сталинград ҡалаһында тыуғайны. Ошонда гитлерсы армияның ҡушы байығайны. Сит ил кешеләре лә Сталинградтың бөтә донъя азатлығын һаҡлап алып ҡалғанлығын, уның өсөн Совет Армияһының батырлығына иптәш Сталиндең бөйөклөгөнә бурыслы икәнлектәрен яҡшы аңлайҙар. Күптән түгел генә Сталинградта булған мексиканец Х. Эриберто музей китабына үҙ тойғоһон яҙып ҡалдырған: «Бындағы һуңғы һуғышта ил ҙур бәрелеш булды. Ундайҙы тарих белмәй ине әле. Гитлеризм менән көрәштә Сталиндең хәрби гениһе, уның генералдарының таланты, Совет Армияһының геройлығы еңде».

Эйе, бындағы һуғыш һәм уның эҙҙәре, героик халыҡтың ҡорбандары күптәрҙә, бик күптәрҙә тыныслыҡ көрәшенә булған ышанысты ныҡыта. Бөгөн дә бында ҙур еңеүҙәр тыуа. Бөтә донъялағы тыныслыҡты, ихтыр бәхетте булдырыу һәм коммунизм төҙөүгә еңеү ул.

Әле күптән түгел генә, Тыуған илебеҙгә көнө ашауселар ябырылған ваҡытта, Сталинград арҡылы өҙөлөкһөҙ техника үтә ине. Әле лә машиналар состав-состав булып килә. Тик һуғыш өсөн түгел, сталинсы бөйөк төҙөлөштәргә киләләр улар. Сталинградтан Волга—Дон каналы башлана, уның ярым сүллеклә районарында һуғарыу каналдары ҡаҙыла. Сталинград гидроэлектростанцияһы төҙөлөшөндә лә эш бөтә киңлегенә йәйелдерелгән. Бында шулай уҡ государстволың мәшһүр урман полосалары ла ултыртыла башланы.

Бындай гигант төҙөлөштәрҙең үҙ ерҙәрендә булыуы менән Сталинград хеҙмәтсәндәре хаҡлы рәүештә ғорурланалар. Улар, бөтә ил халҡы кеүек үк, был төҙөлөштәргә ярҙам итәләр, унда ҡатнашалар. Ҡаланың һәр бер хеҙмәтсәне үҙенең хеҙмәтен, пландан тыш биргән продукцияһын, экономияланған материалын коммунизм төҙөлөшөнөң фондына тип атай. Һәр урында сталинградлылар авангардта, улар һәр ваҡыт хеҙмәт вахтаһында. «Красный Октябрь» заводының материалдарында, трактор заводының ҙур конвейерында, төҙөлөш майҙандарында, судоверф стапелдарында, герой Петров исемендәге заводтың цехтарында, тимер юл депоһында — ҡаланың һәр урынында эшселәр бөгөн стахановсы хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Тыуған илгә достойн бүләк итеп, коммунизм төҙөлөштәренә ярҙам итәләр. Ҡаланың 60-тан артыҡ предприятие һәм төҙөлөш ойошмаһы уларға шефлыҡ ярҙамын күрһәтә.

Сталинградтың емерелеүе кот осорорлоҡ ине. Совет кешеһен аңламаған кешеләр «юҡ, булмаҫ, ул аяҡҡа баҫтырырлыҡ түгел», тинеләр. Ләкин партия һәм халыҡтың көсө ҙур. 1943 йылдан алып ҡаланы аяҡҡа баҫтырыуға дүрт миллиард һумға яҡын средство бирелде. Уның промышленносы хәҙер һуғышҡа тиклемге кимәлдән яҡшыраҡ эшләй, хәҙер продукция етештереү 31,5 процентҡа артыҡ. Бында хәҙер нефтекачалка, экскаватор, буксир пароходы, баржа, яңы маркалы трактор кеүек иң төр продукциялар ҙа етештерелә.

Сталинград кеүек, тик Совет илендәге ҡалалар ғына төҙөлергә мөмкин. Үҙған һигеҙ йыл эсендә бында 1321 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөлдө. Хәҙер ҡаланың торлаҡ фонды һуғышҡа тиклемге кимәлдең 85 процентын тәшкил итә. Тыныслыҡ урамындағы кеүек төҙөк кварталлар иптәш Сталин исемендәге һәм Металлургтар проспекттарында ла. Волга яры буйында ла күп. Культура көн-күреш учреждениеларының бинаһары ла ҡаланы матурланы. Хәҙер ҡалала 87 мәктәп, 90 балалар баҡсаһы, 38 балалар йәслеһе, 4 институт, 9 техникум, 19 больница, 5 кинотеатр, 2 театр, 32 клуб, «Красный Октябрь» заводының техниктар йорто һәм башҡа бик күптәр эшләй. Автобус һәм трамвай хәрәкәте, энергетика хужалығы аяҡҡа баҫтырылған. Тағы ла күп, бик күп төрлө эштәр башҡарылған бында.

Ләкин тағы ла күберәк эштәр күҙ алдында тора. Сталинград бөйөк төҙөлөштәр үҙәге булыу менән бергә үҙе лә ҙурыраҡ, матурыраҡ һәм төҙөкләндерелгән ҡала булырға тейеш. Киләсәктә арзан һәм бәй электр энергияһын етештереү ҡалала яңы промышленность предприятиеларын тыуҙырасаҡ, хеҙмәтсәндәрҙең көн-күрештәре тағы ла яҡшыртыласаҡ. Волга—Дон һыу юлын эксплуатацияға биреү Сталинградты биш диңгеҙҙең эре эске портына әйләндерәсәк.

Был төҙөлөштәр, бөтәһенән элек, ҡаладағы азыҡ-түлек промышленносы предприятиеларын үҫтереүгә килтерә. Маргарин, араҡы, һыра заводтары һәм ҙур ит комбинаты төҙөләсәк бында.

1951 йылда Сталинградтың төҙөүселәре, иптәш Сталинға хат яҙып, үҙҙәренә социалистик йөкләмәләр алғайнылар. 5 декабргә тиклем ҡалала 135 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны, 37 культура-тормош учреждениелары өсөн бина төҙөләсәк. Яңы поликлиника, яңы мәктәптәр бит улар. Сталинградта быйыл гранит һәм мәрмәрҙән төҙөлгән планетарий ҙа буласаҡ. Связь йорто, банк бинаһы, 300 урынлыҡ гостиница, Юстиция йорто, Архитекторҙар йорто, Хеҙмәт дворецы, иҡаны итеп төҙөлгән 50 яңы магазин, столовойҙар, 400 мең квадрат метр асфальтланған юл, тротуар һәм башҡа бик күптәр.

Вокзал — монументаль эре биналарҙың береһе. Уның архитектураһы, Сталинградтың героикаһын күҙаллағанын, тобиғи таш һәм плиталар менән йөҙлөнәсәк.

Көрәштә һәләк булыусылар майҙаны бөгөн үткән көрәштәрҙә түгелгән ҡандың бушҡа китмәүен күрһәтеп тора. Ул инде байтаҡ ҡына киңәйтелгән. Бындағы почет таҡтаһына ҡаланың иң күренекле кешеләре яҙыла. Бынан алыҫ түгел урында коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре картаһы тора. Һәм шунда уҡ коммунизм зодчийы иптәш Сталинға гранит постамент өҫтөнә бронза скульптура яһалып ҡуйылған. Шулай уҡ Тыныслыҡ, Курск, Краснознаменка урамдарын һәм Геройҙар аллеяһын төҙөкләндереүҙең бөтә комплексе лә тамамланыу алдында тора.

Иптәш Сталин исемендәге проспект ҡаланың төп магистрале буласаҡ. Ул, бындағы үҙәк район—Сталин районы арҡылы үтеп, трактор заводынан ҡаланың көньяҡ райондарына саҡлы бөтә ҡала менән һуҙыла. Уның проектында бульвар ҙа, йәшелләндерелгән тротуарҙар ҙа бар. Скульптуралар, фонтандар проспектты биҙәп торор. Царица йылғаһында ул ҙур тимер-бетон күпер менән тоташтырыласаҡ. 40 километрға һуҙылған был гүзәл проспекттың бөгөнгә көндә ҡайһы бер контурҙары ғына күренһә лә, яҡын йылдар эсендә ул, төҙөлөп бөтөп, үҙендәге ҙур биналар, институттар, дворецтар менән балҡып торасаҡ. Красный Октябрь, Баррикада, Сталин, Ворошилов райондарында проспекттың күп төҙөлөштәре тамамланыуға яҡын.

Бындай төҙөлөштәр ҡаланың бөтә райондарында, кварталдарында башҡарыла. Һәр иртәнге Тыуған илен яҡты көнгә тауҙар артынан күтәрелеп сыҡҡас та уның нуры яңы төҙөлөш өҫтөнә төшөп Сталинградтың батыр төҙөүселәрен ҡотлай, ҡаланы йылы нурҙарға күмә. Бөгөн дә бында еңеү сығыштарыла. Шуға күрә лә герой-ҡаланың хеҙмәтсәндәре 9 май көнөн үҙҙәре тыуҙырған байрамға иҫәпләп ҡаршы алалар, уны яңы еңеүҙәр менән билдәләйҙәр.

Бөйөк юлбашсы хөрмәтенә төҙөлгән был яңы Сталинград ҡалаһы Волга буйындағы ҡалаларҙың иң ҙуры, иң гүзәле булып коммунизм маяғылай алыҫ-алыҫтарға, мәңге-мәңгегә балҡыясаҡ.

Ғ. Ибраһимов.
Сталинград ҡалаһы.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Крамбе—яңы майлы культура

Крамбе — үҫеп өлгөрөү яғынан бер йыллыҡ үҫемлек. Ул ботаника системаһы яғынан әүерпәле сәскәләр төркөмөнә инә. Был үҫемлек Абиссинияла ҡырағай рәүештә бик киң таралған. Ул Воронеж ботаника баҡсаһында эшләүсе совет ғалимдәре тарафынан 1932 йылда ғына килтерелде һәм тикшерелде. Һөҙөмтәлә уның орлоғонда май барлығы беленде. Был май аҙыҡ өсөн ярақлы булып тора.

1942—1943 йылдарҙа Башҡортостан шарттарында крамбене үҫтереү буйынса һынау эштәре үткәрелде. Тәжрибәләр уны баҫыуҙарҙа үҫтерергә мөмкин икәнлеген күрһәтте.

Крамбеның вегетатив срогы 85—120 көнгә һуҙыла. Яҙғы һәм көҙгө ҡырауҙарҙан ҡурҡмай. Нулдән түбән 5 градусҡа тиклем булған ҡырауҙарҙы ул еңел кисерә. Ул, сәскәндән һуң 5—6 көндә шытып сыға башлай. Крамбеның һабағы тармаҡланып үҫеүсән булып, бейеклеге 80—90 сантиметрға етә. Сәскәһе дүрт япраҡлы һәм аҡ төҫтә була. Орлоғо йомшаҡ ҡабыҡлы сәтләүек рәүешендә булып, мең орлоктоң ауырлығы 8-10 грамм самаһы тартә. Крамбеның май сығышы 53 процент тәшкил итә.

Беҙҙең Башҡортостан шарттарында крамбеның һәр гектарҙан уртаса урожайы 15-20 центнер самаһына тура килә. Иглин районының Охлебинин мәктәбе, Бишбүләк районының Ҡыңғыр-Мәнәүез мәктәбе уҡыусылары үҙҙәренең тәжрибә участкаларында һәр йылды был культуранан юғары урожай алдылар. Улар крамбе орлоҡтарын күрше колхоздарға биреп, был культураның таралыуын йылдан-йыл киңәйтәләр.

Баҫыусылыҡ сәсеү әйләнешендә крамбене ужым ашлығы, йәки көнбағыш, картоф кеүек, пропаш культуралар артынан сәсергә кәрәк. Крамбе өсөн билдәләнгән ер 20—22 сантиметр тәрәнлектә көҙҙән һөрөлгән булырға тейеш. Тунға һөрөлгән ер яҙ көнө бересе мөмкинлек булыу менән тырматыла. Крамбе үҫемлеге минераль ашламаларға бик һиҙгер. Фосфорлы һәм калийле ашламалар уның урожайын һәм май процентын күтәрәләр. Шуның өсөн крамбе аҫтына һәр бер гектарға суперфосфат 3 центнер, калий тоҙо — 1—1,5 центнер күләмдә көҙҙән индерелә.

Крамбе, юғарыла әйтелеүенсә, яҙғы ҡырауҙарҙан ҡурҡмай. Шуның өсөн уны майҙың тәүге яртыһынан элек тә сәсергә ярай. Сәсер өсөн ғәҙәттәге сәскестәр ҡулланыла. Сәсеү ысулдарынан иң яҡшыһы 40—45 сантиметр аралы теҙмә сәсеү иҫәпләнә. Сәсеү нормаһы һәр гектарға 8—10 килограмм. Орлоҡ күмдереү тәрәнлеге 3—5 сантиметр.

Крамбене үҙ ваҡытында яҡшылап тәрбиәләү — юғары урожай үҫтереүҙә хәл итеүсе шарттарҙың береһе. Шуның өсөн крамбе шытып үҫә башлағас та, теҙмәрәт араларын ҡул мотығаһы йәки ат пропашниктәре менән йомшартырға кәрәк. Рәт араларын икенсе тапҡыр эшкәртеү үҫемлектәр тармаҡлана башлағас, ә өсөнсө эшкәртеү сәскә атыу алдынан үткәрелә. Өҫтәмә аҙыҡландырыу икенсе йәки өсөнсө эшкәртеү алдынан индерелә. Был маҡсатта тиреҫ шыйыҡсаһы, көл һәм ҡош тиҙәге файҙаланыла.

Крамбе үҫемлеге тигеҙ өлгөрмәй. Шуның өсөн 80—85 процентҡа өлгөрөүе менән йыйнай башларға кәрәк. Уны йыйнау өсөн ҡул урағын, лобогрейка йәки комбайнды файҙаланырға мөмкин. Ул ябай молотилкалар менән, каток һәм сыбағастар менән һуғыла. Уның орлоғо ҡоро һәм йылы биналарҙа һаҡланырға тейеш.

Крамбе — Башҡортостан өсөн яңы май культураһы ул. Беҙҙең республикабыҙ өсөн уның киләсәге бик киң. Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы 1951 йылдың 9 мартында махсус ҡарары менән был культураны Башҡортостанда киң рәүештә үҫтерергә тигән ҡарар ҡабул итте, колхоздар өсөн 1951 йылға сәсеү планы билдәләнде, орлоҡ менән тәьмин итеү саралары күрелде.

Ғ. Ашрупов,
биология фәндәре кандидаты.

Ҡарбуҙ һәм ҡауын үҫтереү

Ҡабаҡ, ҡауын, ҡарбуҙ кеүек баҡса культураларында витамин һәм шәкәр бик күп. Улар кеше организмы өсөн диэт аҙыҡтары булып иҫәпләнәләр. Шуның менән бергә, улар хужалыҡҡа ҙур доход килтерәләр. Мәләүез районының «Пөгөш», «Игенсе», «Пробуждение» һәм Чапаев исемендәге, Маҡар районының «Восток», Стәрлетамаҡ районының «Ударник», Дәүләкән районының «Ҡыҙыл Урал» һәм Каганович исемендәге колхоздары ҡауын-ҡарбуҙ үҫтереүҙән йыл һайын 80 — 100 мең һум доход алалар.

Башҡортостанда элек бындай культуралар байтаҡ ҙур майҙандарҙа үҫтерелде. Маҡар, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Ғафури райондары колхоздары баҡсаларҙы йылға һәм күл буйҙарында, ә ялан райондары колхоздары тау битләүектәрендә урынлаштырҙылар. Дымлы һауа төнгө һалҡындарҙы йомшарта, шулай уҡ битләүектәрҙә һалҡындар һирәк була.

Республиканың ялан райондарында ҡарбуҙ-ҡауынды ябай ысулда сәсеү киң таралған. Бында емештәр бик уңа. Йәй бик һалҡын килгән айырым йылдарҙа ғына урожай түбән була.

Алдынғы баҡсасылар яҙғы ваҡыттың ҡиммәтен баһалай беләләр. Ялан райондарҙа ҡарбуҙ, ҡауын һәм ҡабаҡ мөмкин тиклем иртә сроктарҙа, 1 — 10 майҙа сәселә. Әлбиттә, иртә сәсеү яҙғы һалҡындарҙан һаҡлауҙы талап итә. Әгәр ҙә һаҡлап булмаһа, ул саҡта май аҙағында һәм июнь башында яңынан сәселә. Был маҡсатта запас орлоҡтар булдырыла.

Башҡортостандың төньяҡ һәм урман райондарында ла ҡарбуҙ-ҡауынды сәсергә мөмкин. Яҡшы тәрбиәләгәндә ул был райондарҙа ла юғары урожай бирә. Урман райондарҙа ҡарбуҙ-ҡауынды рассадалар менән ултыртырға, тупраҡты йылытыу саралары күрергә кәрәк.

Тупраҡты йылытыу өсөн, ғәҙәттә, тарланып ҡыҙған тиреҫтән түтәлдәр эшләнә һәм бында ҡарбуҙ-ҡауын оялап үҫтерелә. Ояға тупраҡ һалына. Иң еңеле — рассаданан ултыртыу. Рассадалар торф көршәктәрҙә йәки сиҙәм ҡәстәрҙә үҫтерелә. Май баштарында ярым йылытылған парник булдырыла. Парник өсөн ҡалын тиреҫ һалына һәм өҫтөнә тупраҡ түшәлә. Шунда рассада көршәктәре йәки ҡәстәре урынлаштырыла һәм 10 — 15 майҙа уларға ҡарбуҙ һәм ҡауын сәселә. Ҡәҫле үҫентеләр 5 — 10 июндә баҡсаға күсерелә. Ултыртҡанда 1,5—2 метр аралыҡ ҡалдырыла. Ултыртыуҙан элек рассадаға һыу һибелә. Ултыртҡандан һуң да һыу һиберге кәрәк. Был эш 1-2 көн дауам итә. Бында ашламалар индереү тағы ла яҡшы. Йәй буйына 2—3 тапҡыр ашларға мөмкин. Үҫә бара, һәр бер ояла 3 төп үҫенте ҡалдырыла.

Бер гектар майҙанда ултыртыу өсөн 3—3.5 мең төп йәки 10 мең үҫемлек ҡауын йәки ҡарбуҙ кәрәк. Бер гектар ҡауын һәм ҡарбуҙ 30—50 мең һум доход бирә.

С. Умов,
ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.

Радио көнөнә арналған тантаналы ултырыш

7 майҙа Өфөлә ҡала партия, совет һәм общественный ойошмалары вәкилдәренең радио көнөнә арналған тантаналы ултырышы булды.

Радио көнө тураһында доклад менән Башҡорт радиоинформация комитеты председателе иптәш Шафиков сығыш яһаны.

Унда ҡатнашыусылар ҙур күтәренкелек менән бөйөк юлбашсыбыҙ ҡәҙерле Иосиф Виссарионович Сталинга ҡотлау хаты ҡабул иттеләр.

Ултырыштан һуң радиоинформация комитеты, Башҡорт государство опера һәм балет театры артистәре тарафынан ҙур концерт ҡуйылды.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 7 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе 7 майҙа үҙ эшен дауам итте. Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

[illegible]

СССР вәкиле Громыко, СССР делегацияһы [illegible]

Франция вәкиле Пароди [illegible]

Унан һуң СССР вәкиле Громыко сығыш яһаны.

— Совет делегацияһы, — тине ул, — [illegible]

[illegible] белә.

— Был мөһим мәсьәлә буйынса беҙҙең арала булған айырымлыҡтарҙың асылы тураһында беҙ бер нисә тапҡыр һөйләнек инде, — тип дауам итте Громыко. — Бөтә эш өс держава вәкилдәренең был ике мөһим мәсьәлә тураһында «хәтергә төшөрөп китеү» менән генә сикләнергә ынтылыуҙарынан тора ла инде, шул уҡ ваҡытта совет делегацияһы был ике мәсьәләнең — Германияны демилитаризациялау тураһындағы һәм дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләләрҙең көн тәртибендә лайыҡлы урын алыуҙарын һәм уларҙың Министрҙар Советы алдына тулыһынса асыҡ һәм аныҡ бурыс ҡуйылырлыҡ итеп формулировать ителеүҙәрен талап итә, беҙ Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләгә ул лайыҡлы булған урындың бирелеүе яғында торабыҙ. Беҙ был мәсьәләне артҡы планға ҡуйыуға ҡаршы киләбеҙ. Беҙ Министрҙар Советының тап бына дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡа- [illegible] государстволарҙың оборона интересы менән һәм ғөмүмән тыныслыҡты яҡлау интерестәре менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ, ә улар бөтөнләйгә икенсе маҡсатты, яңы һуғышты әҙерләү маҡсатын күҙҙә тоталар.

— Пароди, — тине йомғаҡлау һүҙендә Громыко, — совет делегацияһы, бынан өс көн элек өс держава вәкилдәре индергән өс тәҡдимдең береһен үҙенең ҡабул итеүен белдерә аламы, тип һорай. Был һорауға яуап ябай ғына: юҡ, быны белдерә алмай. Был мәсьәлә буйынса беҙҙең позициябыҙ был тәҡдимдәргә баһа биргән ваҡытта, шулай уҡ өс держава тәҡдимдәренең «А» вариантына 4 майҙа беҙҙең төҙәтеүебеҙҙе индергән ваҡытта етерлек тиклем асыҡ әйтелгәйне. Беҙ белдергәнебеҙсә, көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү хәҙер дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләгә АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең мөнәсәбәтенә бәйләнгән.

Громыко белдереүенән һуң Пароди ултырышты ябырға тәҡдим итте.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 7 май. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһе 7 майҙа, Халҡ армияһының частәрө Ҡытай добровольцтәренең отрядтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, бөтә фронттарҙа ла дошмандың контратакаларын уңышлы кире ҡағып, уға йәнле көстә һәм техникала ҙур юғалтыуҙар яһайҙар, тип хәбәр итте.

Халҡ армияһының частәре көнсығыш яр буйында 7 майҙа дошмандың 3 самолетын атып төшөрҙөләр. Пхеньян районында Халҡ армияһының зенит частәре ике «В—29» самолетын атып төшөрҙөләр, 5 летчик пленға алынды.

ИПТӘШ И. В. СТАЛИНГӘ ҠОТЛАУ ХАТЫ

Совет Армияһының Чехословакияны азат итеүе... алты йыл тулыуға арнап Прагала үткәрелгән тантаналы ултырышта ҡабул ителгән

ПРАГА, 6 май. (ТАСС). 5 майҙа Совет Армияһының Чехословакияны азат итеүенә 6 йыл тулыуға арнап Прагала үткәрелгән тантаналы ултырышта ҙур күтәренкелек менән И. В. Сталинға ҡотлау хатының тексы ҡабул ителде. Хатта былай тип әйтелә:

Ҡәҙерле иптәш Сталин! Беҙҙең Тыуған илебеҙҙе данлы Совет Армияһының азат итеүенә 6 йыл тулыу көнөндә беҙ Һеҙгә һәм бөтә совет халҡына үҙебеҙҙең мәхәббәт һәм рәхмәт тойғоларыбыҙҙы ебәрәбеҙ.

Совет Армияһы Һеҙҙең юлбашсылығығыҙҙа бынан 6 йыл элек, гитлерсе баҫҡынсыларҙы еңеүгә өлгәште. Совет геройҙарғы беҙҙе һәләк булыуҙан ҡотҡарып ҡалған өсөн, беҙҙең өсөн азатлыҡ һәм үҙебеҙҙең ватаныбыҙҙа социализм төҙөү мөмкинлеген яулап алған өсөн рәхмәт тойғоларын бер ниндәй ҙә һүҙҙәр менән әйтеп булмай. Ҡеүәтле социалистик Советтар Союзынан башҡа, данлы большевиктәр партияһынан башҡа, ҡәҙерле иптәш Сталин Һеҙҙән башҡа, — беҙҙең яңы тормошобоҙ ҙа булмаҫ ине.

Хәҙер беҙ социалистик промышленносте һәм ауыл хужалығын төҙөү өсөн көрәштәге бересе уңыштарыбыҙҙы күрәбеҙ. Беҙ, уларға, бөтәһенән элек, шуға күрә өлгәштек, сөнки совет халҡының өлгәһе һәм тәжрибәһе һәм уның туғандарса ғәйәт ҙур ярҙамы беҙгә алға табан ҡыйыуыраҡ барырға ярҙам итә. Беҙ Һеҙҙән социализмде тағы ла нисек яҡшыраҡ һәм йылдамыраҡ төҙөү кәрәклегенә, уның бөтә дошмандарын тағы ла нисек килешмәүсәнерәк юҡ итеү кәрәклегенә өйрәнәбеҙ. Совет халҡының дуҫлығы булмаһа, Советтар Союзының үлсәп бөтәргеһеҙ экономик ярҙамы булмаһа, Һеҙҙең, иптәш Сталин, атайҙарса хәстәрлегегеҙ һәм кәңәштәрегеҙ булмаһа, — беҙҙең төҙөлөшөбөҙҙә уңыштар ҙа булмаҫ ине.

Коммунизмға еңеүсән рәүештә барыусы еңелмәҫлек Советтар Союзы бөтә донъяла тыныслыҡтың һәм халыҡтар азатлығының алдынғы терәге, беҙҙең илебеҙ һәм беҙҙең төҙөлөшөбөҙ өсөн дә иминселек һаҡсыһы булып тора. Беҙ енәйәтселәрҙең ҡара ниәттәренә ... ҡаршы тыныслыҡ ... ҡаҡшамаҫ фронтында, Советтар ... яғында нык торабыҙ.

Тыныслыҡты һаҡлап алып ... эшен үҙ ҡулдарына аласаҡ халыҡ ... көсө тураһында ҡәҙерле иптәш С... Һеҙҙең һүҙҙәрегеҙ, беҙҙе ватаныбыҙ... ғы ла ныҡышмалыраҡ тәҙәргә ... ныслыҡты нығытырға рухландыра...

Беҙҙең республикабыҙҙың бөтә... лы кешеләре был көндәрҙә бөтә... держава араһында Тыныслыҡ ... төҙөү өсөн, Көнбайыш Германия... раллаңдырыуға ҡаршы бөйөк ... рергә әҙерләнә. Беҙ бөтә донъяның ... миллионлаған тыныслыҡ һөйөүсе... ләренең тауыштары менән бергә ... тауыштарыбыҙҙы ла империал... өсөн иҫкәртеү булып хеҙмәт ите... лайбыҙ. Империалистар үҙҙәренең ... интерестәре өсөн кешелекте яңы ... ҡа ылыҡтырырға теләйҙәр.

Һеҙҙең тәрән аҡыллы етәксе... ҡәҙерле иптәш Сталин, кешелек... һы тыныслыҡ һәм бөтә халыҡтар... лығы өсөн изге көрәштә еңеп сы...

Ленин — Сталин байрағы ... Һеҙҙең иң яҡшы шәкертегеҙ — ... Готвальд етәкселегендә беҙ ... циализм төҙәйбеҙ һәм төҙәйәсәкбеҙ.

Тыныслыҡтың, халыҡтар азатлығы... һәм бойондороҡһоҙлоғоноң еңелмәҫ... рәге — Советтар Союзы көн ... ғыһын һәм көсәйһен!

Беҙҙе азат итеүсе, тыныслыҡты яҡлаусы Совет Армияһына дан!

Социализмдең халыҡ-ара фро... алдынғы авангарды — беҙҙең ... беҙ — Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) Партияһына дан!

Совет халҡы менән Чехословак ... ның союзы һәм дуҫлығы мәңге ...

Советтар Союзы етәкселегендәге ... лыҡтың Бөтә Донъя фронты ... ғыһын һәм еңһен!

Бөйөк Сталинға дан!

Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһы ултырышының асылыуы

КОПЕНГАГЕН, 5 май. (ТАСС). 5 майҙа Копенгагенда Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһының ултырышы асылды.

Бюро ултырышына Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советының вице-председателе Габриэль д'Арбусье (Ҡара Африка); доктор Модан Атл (Индия); профессор Бернал (Англия); архитектор Абдер-Хаман Бучама (Алжир); элекке министр Пьер Кот (Франция); Дэвис ханым (Англия); яҙыусы Илья Эренбург (СССР); элекке министр Ив Фарж (Франция); ... профессоры Иосиф Громадка (Чехословакия); профессор Леопольд Инфильд (Польша); профессор Феликс Иверсен (Финляндия); яҙыусы Александр Б... (СССР); профессор Д. Д. Косамби (Индия); министр Ли Дэ-чуань ханым (Ҡытай); сенатор Эмилио Серени (Италия); профессор, медицина Академияһының ... не Вейль Алль (Франция); Гуляев (СССР) килде.

Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһының ултырышы тураһында коммюнике

КОПЕНГАГЕН, 5 май. (ТАСС). Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһының ултырышы тамамланғандан һуң коммюнике иғлан ителде. Унда былай тип әйтелә:

«1951 йылдың 5 майында Копенгагенда Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһының ултырышы асылды.

Бюро члендәре һәм ултырышта ҡатнашыу өсөн саҡырылыусылар араһында профессор Берналь; элекке министр һәм парламент депутаты Пьер Кот; АҠШ-тың конгрегационалистик сиркәүенең пасторы Джон Дарр; Ҡытай Ҡыҙыл Тәре обществоһының председателе Ли Дә-чуань ханым; яҙыусы Илья Эренбург; элекке министр, Францияның Тыныслыҡтың Милли Советы председателе Ив Фарж; Бельгия парламентенең Брюсселдән депутаты Изабелла Блюм ханым; Ҡара Африка вәкиле Габриэль д'Арбусье әфәнде; Италия юрисы Феноальтеа; драматург Корнейчук; архитектор, ғәрәп илдәре вәкиле Бучама; теолог, сиркәүҙәрҙең Бөтә Донъя советы үҙәк комитетының члены профессор Громадка; Бомбейҙәге медицина факультеты профессоры Атал әфәнде; Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Сан-Францисколағы учредительный конференцияһында Австралия делегацияһының члены Стрит ханым; тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн көрәштең Халҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар лигаһының Дания бүлеге етәксе комитетының члены Рут Херман ханым; медицина профессоры Могенс Фог; Франция парламенты депутаты Жильбер де Шамбрән әфәнде; Ҡытай шағиры Эми Сяо һәм Польша ғалиме профессор Инфильд бар.

Бюро үҙенең ултырыштарында биш бөйөк держава: Америка Ҡушма Штаттары, Советтар Союзы, Ҡытай халҡ республикаһы, Великобритания һәм Франция араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү өсөн халҡ-ара кампанияны үҫтереү мәсьәләләрен тикшерәсәк.

Киҫкенләшкән халҡ-ара хәлдең хәҙерге осоронда Бюро Тыныслыҡ Пактын төҙөү өсөн кампанияны көсәйтеү өсөн кәрәкле сараларҙы эшләү менән шөғөлләнәсәк. Тыныслыҡ Пакты яңы һуғыштың ... барған ҡурҡынысын бөтөрөргә тейеш...

Бөйөк державалар араһында килешеүгә өлгәшеү юлында осраусы айырым... шарттарында биш бөйөк держава... һында Тыныслыҡ Пактын төҙөү ... кампания халыҡтарға уларҙың тыныслыҡ... ҡа булған ҡеүәтле ынтылышын ... трацияларға мөмкинлек бирәсәк.

Бюро тыныслыҡты яҡлау ... ҙыҡһыныусы төрлө халҡ-ара ойошма... ҙың вәкилдәре менән һөйләшеүҙәр... ҙөмтәләрен өйрәнәсәк».

Франция медицина фәндәре Академияһының члены профессор Вейль Алль ... диме буйынса Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһы Дания халҡына мөрәжәғәт ҡабул итте.

«Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһы, — тип әйтелә мөрәжәғәттә, — Данияны фашистик иҙеүҙән азат итеүгә 6 йыл тулыу көнөндә Копенгагенда ултырышҡа йыйналып, ҡунаҡсыллыҡ күрһәткән өсөн Дания халҡына ҡайнар рәхмәт белдерә һәм уға ысын күңелдән тыныслыҡ һәм сәскә атыу теләй».

* * *

КОПЕНГАГЕН, 6 май. (ТАСС). Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһы ... майҙа үҙ эшен дауам иттерҙе.

Бюроны Данияның төрлө ойошма... нан һәм предприятиеларынан: Б... районының тыныслыҡты яҡлаусылар комитеты, Бурмейстер Ог Вайн суднолар төҙөү верфе. Копенгагендән башҡа ... на предприятиеларының эшселәре, ... эшселәре, Дания тыныслыҡты яҡлаусыларының 21-се урындағы комитеты, ... мократ юристарҙың халҡ-ара ассоциацияһының Дания бүлеге, йәштәрҙең һәм студенттарҙың бөтә донъя фестивален әҙерләнеү буйынса Дания комитеты, Вестербро районы ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтенең элекке члендәренең ... ҙары делегациялары ҡотланы.

Һыйыр һауыусы Әминә

Зал тулы халҡ. Бында ауыл хужалығы алдынғылары үҙ эштәренең тәжрибәләре менән уртаҡлашырға йыйылғандар. Сығыштар ҙур ихтирам менән тыңлана. Һәр кем ниндәй булһа ла, яңы эш алымы өсөн алыу өмөтө менән тулы. Бындай кәңәшмәләр бары тик ошондай маҡсатта үткәрелә. [illegible]

[illegible]

Бына өсөнсө номерле ферма.

Әминә үҙенең эшендә ҡаты тәртип урынлаштырған. Һыйырҙарҙың һәр ҡайһыһын ул көндә бер ваҡытта һауа. Аҙыҡ бөтә һыйырҙарға ла бер күләмдә түгел, ә уларҙың йәшенә, ҡасан быҙаулауына ҡарап бирелә. Сөнки, рационды беҙоу һыйырҙарҙан һөттө ... [illegible]

[illegible] һәм күпме күләмдә биреү һөҙөмтәһендә һыйырҙан һөттө күберәк алып була. Ветврачтар йәкмәткән эштәрҙе нисек башҡарырға һәм бик күп ошондай мәсьәләләрҙә хәл итә белеү, Әминәнең көндәлек эше булып тора. Ул үҙенең белемен, тәжрибәһен яңы эш методтары менән байыта һәм теоретик белемен зоотехник курстарға йөрөп уҡыу юлы менән арттыра.

Үҙенең арта барған белеменә таянып, [illegible]

[illegible] күптәр. Былар алдынғы һыйыр һауыусылар — совхоз коллективының ғорурлығы. Улар үҙҙәренең тормоштарын һөт һауыуға арнағандар, бөтә көстәрен, энергияларын һәм белемдәрен ошо почетлы эшкә бирәләр.

Быйтыр Әминә 11 һыйыр һауа ине. Эш күп һәм мәшәҡәтле булыуға ҡарамаҫтан, дәнлыҡлы һыйыр һауыусы был менән генә ҡәнәғәтләнмәне һәм быйыл 15 һыйыр ҡарауға булды. Уларҙың һәр ... [illegible] Әминә государствоға 52500 килограмм һөт бирергә көрәшә.

Әминәнең быйыл ... [illegible]

М. Мөхәмәтдинов,
Абзан районы ... [illegible]

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — «ПАЯЦЫ» һәм концерт.
Рус драма театрында—«ЛУТОНИНДОР СЕМЬЯҺЫ».
«Октябрҙә» — «ТЫНЫС БОНДОРҘО».
«Салауатта» — иртән «БЕҘҘЕҢ ... ЕГЕТЕ», кис «ЯНИКА».
«Уралда» — «БЕРЕНСЕ СТАРТ».
Матросов исемендәге кинотеатрҙа «БЕРЕНСЕ СТАРТ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ... культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

ПО 2471 Өфө газеталар нәшриәтенең типографияһы. Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

Ҡыҙыл Башҡортостан

1951 йыл № 91 (8808) 11 МАЙ йома

хаҡы 20 тин.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СССР Министрҙар Советы Председателе иптәш Сталинға Германия Демократик Республикаһы хөкүмәтенең телеграммаһы (1-се бит).
СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. М. Шверникка Германия Демократик Республикаһы президенте Вильгельм Пик телеграммаһы (1-се бит).
Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында һәм Башпрофсоветта (1-се бит).
Герой Александр Матросовҡа мәңгелек дан!
ВКП(б) Өлкә Комитеты секретаре иптәш С. Ә. Ваһапов телмәре (2-се бит).
Ә. Бикчәнтәев. — Бөйөк ҡоролоштар өсөн (2-се бит).
Баязит Бикбай. — Матросов һәйкәле (2-се бит).
СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ. З. Ишмаев. — Колхоз ауылы тураһында ҙур роман (3-сө бит).
Мәктәптәрҙә яңы уҡыу йылына әҙерлек. Р. Хәлимов. — Дүртөйлө районы мәктәптәренең сәҡырыуы буйынса...
АУЫЛ СОВЕТЫ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ ТРИБУНАҺЫ. Шәриф Мортазин. — План — уңыштарҙың нигеҙе (3-сө бит).
СПЕЦИАЛИСТ КОНСУЛЬТАЦИЯҺЫ. Ғ. Ашимов — Пар һөрөүҙе тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп үткәрергә (3-сө бит).
Корея Халыҡ-Демократик республикаһы хөкүмәтенең белдереүе (4-се бит).
Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе (4-се бит).

Массовый-политик эштең идея кимәлен күтәрәйек!

Большевиктар партияһы хеҙмәтсәндәрҙе тәрбиәләүгә, халыҡ араһында киң политик аңлатыу эше алып барыуға һәр ваҡыт айырата ҙур әһәмиәт бирә. Быға шуға күрә лә аңлатыу, ышандырыу методы беҙҙең партиябыҙҙың массаға етәкселек итеүендә төп метод булып тора. Етәкселек итеү, тип өйрәтә иптәш Сталин, ул массаға аңлатыу юлы менән партия политикаһының дөрөҫлөгөнә уны ышандыра белеү, массаны партия аңлылығы кимәленә күтәреү һәм, шулай итеп, массаның партия яҡлы булыуын, уның коммунизм өсөн батыр көрәшкә әҙер булыуын тәьмин итеү тигән һүҙ.

Ялҡынлы большевистик һүҙҙәр менән халыҡты фиҙакәр хеҙмәткә, Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәтен артабан нығытыуға саҡырыу—партия, комсомол, профсоюз ойошмаларының һәм агитаторҙарҙың изге бурысы ул.

Агитатор беҙҙең коммунизм төҙөү фронтындағы еңеүҙәребеҙҙең тарихи әһәмиәтен хеҙмәтсәндәрҙең аңына еткерергә тейеш. СССР Государство план комитетенең һәм Үҙәк статистика управлениеһының һуғыштан һуңғы сталинсә биш йыллыҡ пландың үтәлеш йомғаҡтары тураһындағы Белдереүендә булған һәр бер һан йәнле һәм ҡыҙыҡтырғыс беседа өсөн ҙур тема булып тора.

Агитацияның юғары идеялы булыуына, һәр беседа, доклад һәм лекцияның тыңлаусылар аңында тәрән эҙ ҡалдырыуына, массаны хеҙмәт подвигтәренә дәртләндереүенә өлгәшергә кәрәк. Политик агитация партия һәм хөкүмәт тарафынан предприятие, колхоз, совхоз, МТС коллективтәре алдына ҡуйылған бурыстарҙы ваҡытында, уңышлы үтәүгә ярҙам итеү өсөн саҡырылған. Кызғаныска ҡаршы, бик күп агитаторҙар, урындағы факттарҙы өйрәнеү менән шөғөлләнмәйенсә, үҙҙәренең эшен ҡыҫҡырып газета уҡыуға, дөйөм темаларға беседалар үткәреүгә генә ҡайтарып ҡалдыралар. Ҡайһы бер агитаторҙар һәр ваҡыт ыңғай факттар тураһында ғына һөйләүҙе ҡағиҙә итеп алалар. Был—бик ҙур яңылышлыҡ.

Бөйөк юлбашсыларыбыҙ Ленин һәм Сталин, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү булмаһа, алға хәрәкәт итеүҙең, прогресслек-ле барыуҙың булыуы ла мөмкин түгел, тип өйрәтәләр. Тимәк, агитация мотлаҡ өҙлөкһөҙ һөжүм итеүсе, маҡсатҡа йүнәлешле итеп алып барылырға тейеш. Алдынғы предприятиелар менән бер рәттән, беҙҙә артта ҡалыусы, үҙ бурыстарын тулыһынса үтәй алмаусы заводтар, фабрикалар, колхоздар, совхоздар, МТС-тар бар. Артта ҡалыусыларға алдынғылар кимәленә күтәрелергә, етешһеҙлектәргә һәм эшкә һәлкын ҡараусыларға ҡаршы общество фекерен тупларға ярҙам итеү һәр агитаторҙың изге бурысы булып тора.

Беҙҙең республикабыҙҙың ҡала һәм ауыл партия ойошмалары политик агитация алып барыу эшендә бик күп тәжрибә тупланылар. Быға РСФСР һәм БАССР Верховный Советтарына һайлауҙар кампанияһы бик ныҡ ярҙам итте. Ул кампания ваҡытында агитация-пропаганда эшенә мөңәрләгән агитаторҙар ныҡтырылды һәм партия ойошмаларына большевистик һүҙҙе иң киң массаға илтеп еткерергә, халыҡтың барлыҡ ҡатламын партия йоғонтоһо менән солғап алырға мөмкинлек бирҙе.

Партия ойошмаларының бурысы һайлауҙар кампанияһы осоронда йәйелдерелгән политик агитацияны артабанғы эштә нығытыуҙан һәм тағы ла камиллаштереүҙән, уның идея кимәлен күтәреүҙән тора ине. Ләкин партияның күп кенә ҡала, район комитеттәре һәм тәүге ойошмалары был эшкә тейешенсә әһәмиәт бирмәнеләр, агитацион эште туҡтатыуға юл ҡуйҙылар, агитаторҙар өсөн семинарҙар, кәңәшмәләр үткәрмәй башланылар, хеҙмәтсәндәрҙең йәшәгән урындарында агитация алып барыуҙы ташлап ҡуйҙылар, агитпункттарҙы яптылар. Бындай хәлгә Белорет, Стәрлетамаҡ ҡалаларында, Бөрө, Иглин, Байҡыбаш райондарында урын бирелде. Агитация эшен баһалап етермәү, политик агитацияны партия [illegible]

Был хәлгә артабан түҙеп тороу һис тә мөмкин түгел. Партия [illegible]

[illegible]

Массовый-политик эште артабан йәйелдереү—беҙҙең [illegible] уңыштарыбыҙҙың [illegible] партия-политик эшенән айырылғыһыҙ бәйләнгән.

Мәскәүҙә Еңеү Көнө

Тыуған илебеҙҙең башҡалаһы Мәскәү хеҙмәтсәндәре Еңеү Көнөн бөтә совет халҡы менән бергә тантаналы билдәләнеләр.

[illegible]

Культура йорттарында һәм клубтарҙа байрам кисәләре булды. [illegible]

Совет Армияһының М. В. Фрунзе исемендәге Үҙәк Йортонда [illegible]

Ҡараңғы төшкәс Мәскәүҙең [illegible] Тап 22 сәғәттә [illegible] 30 артиллерия залпы [illegible]

(ТАСС)

СССР Министрҙар Советы Председателе Иптәш СТАЛИНҒА

Германия Демократик Республикаһы хөкүмәтенең телеграммаһы

БЕРЛИН, 7 май. (ТАСС). Азат итеүҙең Еңеү айҡанлы Германия Демократик Республикаһының хөкүмәте СССР Министрҙар Советы Председателе Иосиф Виссарионович Сталинға түбәндәге телеграмманы ебәрҙе:

«СССР Министрҙар Советы Председателе, Генералиссимус Иосиф Виссарионович Сталинға.

Бынан 6 йыл элек, 1945 йылдың 8 майында, Советтар Союзының батыр армияһы беҙҙең немец Тыуған илебеҙҙе гитлерсе фашизм хакимлегенән азат итте. [illegible]

Ҙур ҡорбандар һалып, совет халҡы һәм Совет Армияһы [illegible]

[illegible]

Германия Демократик Республикаһы хөкүмәте.

Ульбрихт,

Премьер-министр урынбаҫары».

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. М. ШВЕРНИККА

Германия Демократик Республикаһы президенте Вильгельм Пик телеграммаһы

БЕРЛИН, 7 май. (ТАСС). Азат итеүҙең Еңеү айҡанлы Германия Демократик Республикаһының президенте Вильгельм Пик СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. М. Шверникка түбәндәге телеграмманы ебәрҙе:

«СССР Верховный Советы Президиумының Председателе Н. М. Шверникка.

Председатель әфәнде!

[illegible] Германияны демилитаризациялау тураһындағы, тыныслыҡ договорын төҙөү һәм һуңынан бөтә оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыу тураһындағы талапты бөтә кәңәшмәләрҙең беренсе нәүбәттәге программа [illegible] тыныслыҡ һөйөүсе Демократик Германия өсөн көрәштә тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу эшенә үҙ вкладыбыҙҙы индереү ихтыяры менән тулы булыуыбыҙға ышандырыу ҡабул итегеҙ.

Вильгельм Пик».

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында һәм Башпрофсоветта

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм Башпрофсовет урындағы һәм кооператив промышленность предприятиеләренең 1951 йылда I квартал планын үтәү буйынса социалистик ярыш йомғаҡтарын тикшерҙе.

Урындағы промышленность предприятиеләре араһында валовой продукция етештереү планын 110,1 процентҡа үтәгән яҙыу машиналары заводы (директоры иптәш Мартыненко), аҙыҡ промышленносы предприятиеләре араһында валовой продукция етештереү планын 136,5 процентҡа үтәгән Башмельтрест (управляющийы иптәш Петров, местком председателе иптәш Ветошников), урындағы яғыулыҡ промышленносы предприятиеләре араһында валовой продукция етештереү буйынса планды 134 процентҡа үтәгән Ауырғазы райтопы (директоры иптәш Яношевский, профорг иптәш Пунтаков), промысловой кооперация артелдәре араһында валовой продукция етештереү буйынса планды 123,8 процентҡа үтәгән Өфө ҡалаһындағы «Аккумулятор» артеле (председателе иптәш Аристархов) социалистик ярышта еңеүселәр тип табылдылар. Был предприятиеләргә Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды. Беренсе урынды яулап алған предприятиеләрҙәге айырыуса ҙур уңышҡа өлгәшкән эшселәрҙе, инженер-техник работниктарҙы һәм хеҙмәткәрҙәрҙе бүләкләү өсөн аҡсалата премиялар бирелде. Шул иҫәптән Башмельтрестҡа 22,5 мең һум, яҙыу машиналары заводына — 17 мең һум, «Аккумулятор» артеленә — 12 мең һум, Ауырғазы райтопына 3 мең һум аҡса бирелде.

Урындағы промышленность предприятиеләре араһында валовой продукция етештереү буйынса планды 144,9 процентҡа үтәгән Ғафури райместпромкомбинаты, аҙыҡ промышленносы предприятиеләре араһында валовой продукция етештереү буйынса планды 100,1 процентҡа үтәгән Туймазы райпищепромкомбинаты, промысловой кооперация артелдәре араһында валовой продукция етештереү буйынса планды 105,9 процентҡа үтәгән Өфө ҡалаһындағы «Пимокат» артеле һәм инвалидтәр кооперацияһы артелдәре араһында валовой продукция етештереү буйынса планды 131,2 процентҡа үтәгән Баҡалы районындағы «Объединение» артеле ярышта икенсе урынды алдылар.

Был предприятиеләрҙең социалистик ярышта айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән эшселәрен, инженер-техник работниктарен һәм хеҙмәткәрҙәрен бүләкләү өсөн аҡсалата икенсе премия бирелде.

Урындағы промышленность министерствоһының Октябрьский горместпромкомбинаты социалистик ярышта өсөнсө урынды алды.

Шулай уҡ Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм профессиональ союздарҙың Башҡортостан Советы 1951 йылдың I кварталында бик күп предприятиеләрҙең яҡшы эшләүҙәрен билдәләнеләр.

Ҡарамалы-Ғөбәй МТС-ы механизаторҙарының уңышы

Ҡарамалы-Ғөбәй МТС-ы механизаторҙары быйыл трактор агрегаттарының эшен сәғәт графигы менән ойошторҙолар.

«Победа» колхозын хеҙмәтләндереүсе тракторист Максим Дремин ДТ—54 тракторында сәғәт графигы менән эшләп, көн һайын 80—85 гектар майҙанда ашлыҡ сәсте һәм 48—52-шәр гектар майҙанда культивация үткәрҙе һәм 8-9-ар гектар ер һөрҙө. Ул яҙғы сәсеү осоронда үҙ сменаһында 220 гектар ер эшкәртте. Ике бер туған Борис һәм Иван Почуевтар ҙа уның өлгөһөндә эшләп, үҙ сменаларында 200—205-әр гектар ер эшкәрттеләр.

«Ҡыҙыл маяҡ» колхозын хеҙмәтләндереүсе иптәш Котлояров етәкселек иткән трактор бригадаһы ла тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә файҙалана. Бында бөтә агрегаттарҙа сәғәт графигы менән эшләйҙәр. Трактор бригадаһының ҙур ярҙамында колхоз иртә культуралар сәсеүҙе 6 көндә тамамланы. Был бригада башҡа төр баҫыу эштәрен дә колхоздар менән төҙөшкән договорҙа күрһәтелгән сроктарҙа үтәп сыҡты.

Ленин исемендәге колхозда эшләүсе иптәш Исламов бригадаһының да уңыштары ҙур. Был бригада аҙ ғына ваҡыт эсендә 1035 гектар майҙанда тунға һөрөлгән ерҙе тырматыу, 1067 гектар майҙанда культивация, 1012 гектар майҙанда сәсеү үткәреп, договор йөкләмәләрен байтаҡ арттырып үтәүгә өлгәште.

Хәҙер колхоздарҙа иртә пар һөрөү буйынса ҡыҙыу эш бара. Трактористар пар һөрөүҙә лә сәғәт графигын киң ҡулланалар. Трактористарҙан Мәстүрә Ғәзизьянова, Рәсүл Гәрәев һәм башҡа күп кенә иптәштәр СТЗ—НАТИ һәм ДТ—54 тракторында үҙ сменаларында көн һайын 8—10 гектар майҙанда пар ере һөрҙөләр.

Мичурин исемендәге колхозда иптәш Ширгалин бригадаһы хәҙер 400 гектарҙан артыҡ майҙанда пар һөрөп, планды үтәү алдында. Шаһиев, Котлояров һәм башҡа иптәштәрҙең трактор бригадалары ла иртә пар һөрөүҙе ошо бер-ике көн эсендә тулыһынса тамамлайсаҡтар.

МТС пар ерҙәренең өстән бер өлөшөнөң артылырағында һөрөү үткәрҙе лә инде. Уның механизаторҙары был эште республикала беренсе булып 18 майҙан да һуңға ҡалмай үтәп сығыу өсөн көрәште көндән-көн көсәйтә баралар.

Е. Тулбаев.

Социалистик ярышта яңы еңеүҙәргә

Коммунистар партияһы, Совет хөкүмәте һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин етәкселегендә совет халҡы хужалыҡтың бөтә тармаҡтарында ла ҙур уңыштарға өлгәште. Һуғыштан һуңғы сталинсә биш йыллыҡ пландың мөһим бурыстары срогынан алда — дүрт йыл 3 ай эсендә үтәлде.

Совет халҡының бөйөк еңеүҙәре юлбашсыбыҙ иптәш Сталин исеме менән ныҡ бәйләнгән. Бөйөк юлбашсы 1946 йылдың 9 февралендә Мәскәү ҡалаһы Сталин һайлау округы һайлаусыларының һайлау алды йыйылышында беҙҙең алдыбыҙға илебеҙҙә коммунизм төҙөү буйынса грандиоз программа ҡуйғайны.

Бөйөк юлбашсының был программа күрһәтмәһен үтәүҙә хәҙер бөтә совет халҡы ҡатнаша. Совет халҡы менән бергә Башҡортостан хеҙмәтсәндәре лә бик ҙур эш башҡаралар. Завод, фабрика коллективтәре, нефтселәр, төҙөүселәр, тимер юл һәм һыу транспорты работниктәре, социалистик ярышты йәйелдереп, илебеҙҙә коммунизм төҙөү эшенә үҙҙәренең яңынан-яңы вкладтарын индерәләр.

Күптән түгел республиканың нефтселәре, юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға хат яҙып, 1951 йыл өсөн яңы социалистик йөкләмә алдылар. **«Государство планын срогынан алда үтәү өсөн,— тинеләр улар, — бөтә халыҡ социалистик ярышында ҡатнашыу беҙҙең өсөн, Башҡортостан нефтселәре өсөн, большевистик традиция булып әүерелде. Шуға күрә уҙған йылдар өлгөһөндә, беҙ 1951 йылдың планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш ойошторорға ҡарар иттек һәм Әзербайжандың һәм Куйбышев өлкәһенең нефть промышленносы работниктарен уҙған йылда башланған социалистик ярышты дауам иттерергә саҡырабыҙ».**

Бөйөк юлбашсыбыҙға бирелгән был вәғәҙәне республикабыҙҙың нефтселәре, социалистик ярышты киң йәйелдереү нигеҙендә, ойошҡанлыҡ менән үтәйҙәр. Хәҙер Октябрьский, Ишембай нефть промыслаларында һәм бораулау конторҙарында социалистик ярыш байрағы тағы ла юғарыраҡ күтәрелде. «Туймазыбурнефть» тресының беренсе номерлы бораулау конторы коллективы, стахановсы вахтала эшләп, май айы планын уңышлы үтәй, ул апрель айында ла I кварталда өлгәшелгән уңыштарҙы фиҙакәр хеҙмәт менән нығытты. Бораулау тиҙлеген көндән-көн арттыра бара. Апрелдә проходка биреү буйынса тәүлек заданиеһе 115 процентҡа, ә 8 көнлөк задание 102 процентҡа үтәлде. Бораулаусылар алдынғы новаторҙарҙың эш методтарын уңышлы ҡулланалар. 137-се номерлы буровойҙа мастер иптәш Сидоренко етәкселек иткән бригада, инженер Ковалев методын өйрәнеү һәм уны дөйөмләштереү, бригадала социалистик ярышты киң йәйелдереү һөҙөмтәһендә тәүге тапҡыр тиҙләтелгән режимда бораулай башланы. Хәҙер бригада коллективы көндән-көн яңы уңыштарға өлгәшә. Ул, тәүлегенә 30—50 метр бораулап, һигеҙ көндә 306 метр проходка бирҙе.

Бындай коллективтар бораулау конторында ғына түгел, ә нефть сығарыусылар араһында ла, металлургтарҙа ла, тимер һәм һыу юлы транспортында ла, Өфө, Черниковск ҡалаларының промышленность предприятиеләрендә лә бар. Улар социалистик ярышты производство программаһын срогынан алда үтәү, һәр сәғәт, һәр сменала ритмлы эшләү, экономия күрһәткестәрен артабан яҡшыртыу өсөн көрәш йәйелдергәндәр, был көрәштә коммунистар алдынғы сафта баралар, партия ойошмалары уларҙы фиҙакәр хеҙмәткә йүнәлдерәләр, хеҙмәтсәндәрҙең киң массаларын революция генийҙәре Ленин һәм Сталин өйрәткәнсә эшләргә рухландыралар

Уңыштар ҙур. Ләкин былар менән бер рәттән, күп кенә предприятиеләрҙә етешһеҙлектәр ҙа бар әле. Республиканың ҡайһы бер предприятиеләрендә социалистик ярыш тейешле кимәлгә тиклем йәйелдерелмәгән. Черниковск ҡалаһындағы «Дубитель» заводы 1951 йылда ҙур зыян күреп эшләй. Унда оборудованиеларҙың ремонт сифаты түбән, буш тороу, авария ваҡиғалары йыш була. Шунлыҡтан завод быйыл I кварталда планды мөһим изделиелар буйынса үтәмәү генә түгел, ә валовой продукция етештереү буйынса ла планды үтәмәне. Партбюро секретаре иптәш Ситникова ремонт сифатын яҡшыртыу һәм планды срогынан алда арттырып үтәү өсөн социалистик ярышты ойоштороуға иғтибарһыҙлыҡ күрһәтә, коллективты фиҙакәр, стахановсы хеҙмәткә йүнәлдермәй. Шулай уҡ электр лампалары заводы цехтарында ла социалистик ярыш бөтә киңлеге менән йәйелдерелмәгән, технологик дисциплина үтәлмәй. Механизация, хеҙмәтте ойоштороу мәсьәләләренә тейешле иғтибар бирелмәй.

Етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә етерлек көс һәм мөмкинлектәр күп. Тик етешһеҙлектәрҙе большевистик принципиаллелек һәм ныҡышмалылыҡ менән бөтөрөргә генә кәрәк. Партия, комсомол һәм профсоюз ойошмалары, администрация етәкселәре, бөтәһенән элек, бындай ғәмһеҙ ҡараштарға ҡаршы көрәште, алдынғы эшселәрҙең тәжрибәләрен популярлаштыреуҙы, уларҙың ижади инициативаһын үҫтереүҙе ойошторорға, социалистик ярышты һәм стахановсылар хәрәкәтен киң йәйелдерергә, стахановсыларға ярҙам итергә, массаны производство программаһын үтәүгә йүнәлдерергә бурыслылар.

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин: **«Стахановсылар беҙҙең промышленносебеҙҙә яңылыҡ индереүселәр булып торалар, стахановсылар хәрәкәте беҙҙең индустриябыҙҙың киләсәге булып тора, унда эшселәр синыфының киләсәктәге культура-техник күтәрелешенең орлоғо бар, ул беҙгә шундай юлды аса, тик шул юл менән барғанда ғына хеҙмәт етештереүсәнлегенең, социализмдан коммунизмға күсеү өсөн һәм аҡыл хеҙмәте менән физик хеҙмәт араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡты бөтөрөү өсөн кәрәк булған юғары күрһәткестәренә ирешергә мөмкин»,** тип өйрәтә.

Юлбашсыбыҙҙың был күрһәтмәһен һәр бер эшсе һәм етәксе работник бер ваҡытта ла оноторға тейеш түгел. Сөнки Тыуған ил ҡеүәтен нығытыуға, сталинсә гигант төҙөлөштәргә хеҙмәт итеүгә, иптәш Сталин тарафынан ҡуйылған программаны срогынан алда үтәүгә йүнәлтелгән *патриотик күтәренкелекте яҡлау* — партия ойошмаларының һәм һәр бер совет кешеһенең намыҫ эше ул.

Заемға подписка взностарын индерәләр

СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы государство заемына яҙылыу республикабыҙҙа уңышлы бара. Хеҙмәтсәндәр заемға ҙур теләк менән яҙылып, тыныслыҡты нығытыу көрәшенә актив ярҙам итергә әҙер торғанлыҡтарын демонстрациялайҙар.

Заемға актив яҙылыу менән бер рәттән хеҙмәтсәндәр подписка взностарын да индерәләр. Мәҫәлән, Баймаҡ районының колхозсылары 9 май көнөнә подписка суммаларының 85,4 процентын, Бөрйән — 54,4, Бөзәйә — 50,3; Саҡмағош — 42,7, Миәкә — 40, Хәйбулла 38 процентын аҡсалата индерҙеләр ҙа инде. Ҡырмыҫҡалы, Илеш, Шаран, Бишбүләк, Йомағужа, Краснокама, Дүртөйлө райондарының хеҙмәтсәндәре лә взностарҙы срогынан алда индереү эшен киң йәйелдерҙеләр.

Герой Александр Матросовҡа мәңгелек дан

☆☆☆

1943 йылдың 23 февраленда 56-сы Гвардия стрелковой дивизияһының 254-се Гвардия стрелковой полкының гвардия рядовойы Александр Матвеевич МАТРОСОВ немец-фашист баҫҡынсыларына ҡаршы ЧЕРНУШКА ауылы өсөн алып барылған һуғыштың хәл иткес минутында, дошман дзоты янына өрәп үтеп, үҙенең кәүҙәһе менән амбразураны ҡапланы, үҙен ҡорбан итте һәм шуның менән һөжүм итеүсе подразделениеның уңышын тәьмин итте.

СССР Верховный Советы Президиумы 1943 йылдың 19 июнендәге Указы менән гвардия рядовойы иптәш МАТРОСОВҡа үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирҙе.

Иптәш Матросовтың бөйөк подвигы Ҡыҙыл Армияның бөтә воиндары өсөн ғәскәри батырлыҡ һәм геройлыҡ өлгөһө булып хеҙмәт итергә тейеш.

И. СТАЛИН.

Александр Матросовтың һәйкәлен асыуға арналған дөйөм ҡала митингеһе

9 майҙа Еңеү Көнөндә, Өфөлә, герой исемен йөрөткән Үҙәк культура һәм ял паркында данлыҡлы яҡташыбыҙға һәйкәл асылыуға арналған дөйөм ҡала митингеһе йыйылды. Кискә сәғәт 6 тулыуға ҡаланың бөтә мөйөштәренән: предприятиеларҙың, учреждениеларҙың, уҡыу йорттарының коллективтары ҡулдарына байраҡтар күтәреп, колонна-колонна булып, Матросов исемендәге культура һәм ял паркына табан ағылдылар.

Советтар Союзы Геройы, Өфө комсомолецы Александр Матросовҡа һәйкәл асылыуға арналған дөйөм ҡала митингеһын ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты секретары иптәш Х. Мостафин асты.

Александр Матросовтың бронзанан эшләнгән һәйкәле өҫтөнән япма төшөрөлә. Оркестр Советтар Союзының Государство Гимнын башҡара. Геройҙың һәйкәленә ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетынан, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советынан һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумынан, ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитетынан, Башпрофсоветтан, ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитетынан һәм Өфө ҡала комитетынан, шулай уҡ республиканың һәм башҡаланың башҡа общественный ойошмаларынан веноктар һалынды.

Митингыла беренсе булып ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты секретары иптәш С. Ваһапов телмәр менән сығыш яһаны.

Унан һуң Башҡорт АССР-ы Эске эштәр министры Б. Фирсанов, Өфө кабель заводының стахановсыһы Б. Поспелов, Александр Матросов тураһындағы «Үлемһеҙлеккә хоҡуҡ» повесының авторы яҙыусы Әнүәр Бикчәнтәев, ВЛКСМ-дың Өфө ҡала комитеты секретары иптәш Ф. Сибирцев, Башпрофсовет председателе иптәш В. Улин сығыш яһанылар.

Митингыла иптәш И. В. Сталинға котлау хаты ҡабул ителде.

ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары иптәш С. Ә. ВАҺАПОВ телмәре

Иптәштәр!

Бөгөн, еңеү байрамы көнөндә, беҙ үҙ республикабыҙҙың башҡалаһы Өфөлә данлы яҡташыбыҙ, гвардия рядовойы, Советтар Союзы Геройы Александр Матросовҡа һәйкәл асабыҙ.

Был һәйкәл Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында совет халҡы геройлығының символы булып тора.

Большевиктар партияһы һәм бөйөк Сталин етәкселегендә беҙҙең халҡыбыҙ үҙ социалистик Тыуған иленең намыҫын, азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап алып ҡалды, кешелекте фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарҙы, Европа һәм Азияның күп кенә халыҡтарына тыныслыҡ һәм азатлыҡ килтерҙе. Улар хәҙер ышаныслы рәүештә прогресс, демократия, социализм юлы менән баралар.

Һуғыштан тағы ла ҡеүәтлерәк һәм нығыраҡ булып сыҡҡан Советтар Союзы һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда үҙ көстәрен һәм ҡеүәтен байтаҡ арттырҙы. Совет халҡы биш йыллыҡ планды срогынан алда уңышлы үтәне. Ул ярадарҙы төҙәтеү, ҡайһы зур емерелеүҙәрҙе бөтөрөү генә түгел, бәлки промышленность һәм ауыл хужалығы өлкәһендә производствоның һуғышҡа тиклемге кимәлен байтаҡ кимәлдәрҙә уҙып китеүгә лә өлгәште.

Ленин — Сталин партияһы тарафынан марксизм-ленинизмдың бөйөк идеяларында тәрбиәләнгән совет кешеләре, һуғышта еңгән кеүек, хеҙмәттә лә, хеҙмәттә еңгән кеүек, һуғышта ла еңәләр.

Беҙҙең илебеҙҙә героик подвигтар яһарға айырым кешеләр генә түгел, ә меңәрләгән, миллионлаған кешеләр һәләтле. Был — беҙҙең эшебеҙҙең — коммунизм эше дөрөҫлөгөнөң һәм бөйөклөгөнөң һөҙөмтәһе. Үҙ Ватандарына ысын күңелдән, фиҙакәр хеҙмәт итеүҙә совет кешеләре үҙ тормоштарының ысын бәхетен, ысын шатлығын табалар.

Социалистик общество кешеләренең төп мораль сифаты бына шунда. Совет патриотизмының көсө бына шунда.

Үҙ Тыуған илдәрен яҡлап, Советтар Союзы халыҡтары бөйөк рус халҡы етәкселегендә ныҡлылыҡ һәм геройлыҡ мөғжизәләрен күрһәттеләр. Бөйөк рус халҡы менән ҡаҡшамаҫ дуҫлыҡтың традицияһын дауам иттереп һәм арттырып, башҡорт халҡы Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында беҙҙең илебеҙҙең бөтә халыҡтары менән бергә геройҙарса көрәште. Башҡортостандың 200 самаһы воинына Советтар Союзы Геройы исеме бирелде һәм бер нисә меңләгән воинга ордендар һәм медалдар менән наградланды.

Рус халҡының улы, беҙҙең яҡташыбыҙ иптәш Матросовтың бөйөк подвигы бөтә халыҡтың был геройлығы фонында яҡты йондоҙ булып балҡый. Үҙ Тыуған иленә азатлығына тиклем бирелгән Александр Матросов дошман дзотының амбразураһын үҙ кәүҙәһе менән япты, үҙенең йәш ғүмерен Тыуған ил өсөн бирҙе һәм шуның менән бер кешеләй үҙ Ватанын яҡларға күтәрелгән бөтә совет халҡының подвигын кәүҙәләндерҙе.

Александр Матросовҡа бөгөн һәйкәл асыу Совет Тыуған илебеҙҙең үҙ улдары тураһында — Тыуған иленең намыҫы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн үҙ ғүмерҙәрен биргән геройҙар тураһындағы иҫтәлекте нисек изге һаҡлауын күрһәтә.

Беҙҙең Тыуған илебеҙ өсөн ҡаты һуғыш совет халҡынан ҙур ҡорбандар талап итте. Беҙҙең бурысыбыҙ — һәләк булған геройҙарҙың семьялары тураһында һәм һуғыш яланында һаулығын юғалтҡандар хаҡында атайҙарса хәстәрлек күреү тураһында беҙҙең хөкүмәтебеҙҙең, партиябыҙҙың һәм иптәш Сталиндең күрһәтмәләрен изге үтәүҙән тора.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында совет кешеләренең геройлығы бөгөн тыныс ижади хеҙмәттә бөтә совет кешеләре өсөн өлгө, рухланыуҙың бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанағы булып хеҙмәт итә.

Александр Матросовтың образы беҙҙең кешеләребеҙҙе, совет йәштәрен геройлыҡҡа өйрәнергә, Тыуған илде нисек һөйөргә кәрәклекте Александр Матросовтан өйрәнергә рухландырһын!

Был героик образ беҙҙең халҡыбыҙҙы коммунизмдың яҡты бинаһын төҙөү буйынса тағы ла фиҙакәрерәк хеҙмәткә рухландырһын!

Иптәштәр!

Юлбаҫар Америка-Англия империалистик лагеренең йыртҡыстары яңы бөтә донъя һуғышы яғыныын тоҡандырыу өсөн бөтә көстәрен һалалар. Улар үҙҙәренең олһөрәп бөткән, үлеп барыусы капиталистик системаһын халыҡ ҡаны ағымы менән йәшәтергә теләйҙәр.

Ләкин бөтә донъялағы халыҡтар Советтар Союзы һәм бөйөк Сталин етәкселегендә кешелек дошмандарының әҙләнеүҙәрен һәләкәткә күрәтәләр. Улар тыныслыҡ өсөн фиҙакәр көрәшәләр. Һәм, шик юҡ, улар бөтә донъяла тыныслыҡты һаҡлап алып ҡаласаҡтар.

Александр Матросовтың һәм Бөйөк Ватан һуғышының башҡа геройҙарының подвигтарында кәүҙәләнгән совет халҡының ныҡлығы һәм героизмы, уларҙың Тыуған илгә бирелгәнлектәре бөтә донъяла хакимлек итеүҙең шашынған идеяһын йөрөтөүселәр өсөн иҫкәртеү булһын.

Совет халҡы үҙ киләсәгенә ышаныс менән ҡарай, ул азатлыҡтың һәм халыҡтар араһында тыныслыҡтың бөйөк байрағын ныҡлы ҡулдарында тота. Ул коммунизмдың бөйөк ҡоролмаларына нигеҙ һала һәм уларҙы уңышлы төҙөй, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡора, фәнде, культураны үҫтерә һәм үҙ өлгөһө менән бөтә донъялағы хеҙмәтсәндәрҙе рухландыра.

Йәшәһен совет халҡы — героик халыҡ, еңеүсе халыҡ!

Йәшәһен беҙҙең Совет Тыуған илебеҙ — халыҡтар дуҫлығының һәм бәхетенең таянысы!

Йәшәһен беҙҙең бөтә еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы бөйөк большевиктар партияһы!

Йәшәһен бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең юлбашсыһы бөйөк Сталин!

Матросов образы хеҙмәт подвигтарына саҡыра

Йөҙҙәрсә һәм меңдәрсә совет патриоттары бығаса күрелмәгән геройлыҡтар күрһәтеп, дошманды еңеүҙе тәьмин итте. Александр Матросовтың подвигы совет кешеләре героизмының яҡты бер өлгөһө булып тора. Александр Матросовтың исеме — бөтә совет халҡының ғорурлығы.

Уның исемен иң яҡшы комсомолец-стахановсы участкалар, йөҙҙәрсә пионер отрядтары, ҡалаларҙың һәм ауылдарҙың урамдары, баҡсалар һәм колхоздар йөрөтәләр. Уның исеме батырлыҡ өлгөһө.

Александр Матросовтың исемен беҙ Өфө кешеләре, уның яҡташтары, айырыуса ғорурлыҡ менән әйтәбеҙ.

Бөгөн уға, яҡташыбыҙға, Үҙәк культура һәм ял паркында һәйкәл асыу үҙебеҙҙең һөйөклө Тыуған илебеҙ халҡына беҙҙе яңы хеҙмәт подвигтарына саҡыра.

Ҡаты һуғыш үткән яландар һөрәлде генә, үҙған һуғыш килтергән йәрәхәттәр төҙәтелде генә әле. Ә яңы һуғыш утын тоҡандырыусылар өсөнсө бөтә донъя һуғышын әҙерләйҙәр инде. Ләкин халыҡтар һуғыш теләмәйҙәр. Тыныслыҡ, демократия, социализм лагеры яңы һуғыштың башланыуына юл ҡуймаҫтар. Тыныслыҡ һуғышты еңер!

Б. Поспелов,
Өфө кабель заводының стахановсыһы.

☆☆☆

Бөйөк ғорурлыҡ символы

Май айы сәскәләренең хушлы еҫе аңҡып торған һәм алмағастар ҡар төҫлө ап-аҡ сәскәләргә төрөнгән йәмле май көнөндә, урмандарҙағы һәм баҡсаларҙағы ҡоштар әкрен һәм уйсан һайраған сәғәттә, яңы һәйкәл эргәһенә сал сәсле ҡарттар, йәш егеттәр, йәш әсәләр һәм бәхетле ҡыҙҙар йыйналдылар.

Кешеләр яҡташтарының әҙән, матур фигураһын уратып алғандар һәм, тантаналы тынлыҡты тыңлап, һүҙһеҙ ҡатып ҡалғандар.

Бронзаға кейенгән батыр һалдат кешеләр ташҡынын шаулап торған, Лениндең яҡты исемен йөрөткән киң үҙәк туры урамға ҡарап тора. Ул күҙҙәре менән тәбәнгә ҡараған, ҡалын ҡаштары йыйырылып, бер аҙ тиклем күтәрелеп тора, иреңдәре ҡыҫылған, каска аҫтынан сәстәре күренә.

Беҙҙең яҡташыбыҙ, беҙҙең ҡала халҡының һөйөклө егете Саша Матросов ошонан һәйкәлле паркында булды... Ул фронттағыса кейенгән: өҫтөндә йәшел гимнастерка, аяҡтарында кирзовой итек. Күкрәгендә автомат, киң яурынына плащпалатка эленеп тора. Саша уны, тәшен ныҡ тотҡан кеүек, һул ҡулы менән тотҡан.

Меңдәрсә кешеләр бронзанан эшләнгән һәйкәлде йәнле ҡоршау булып уратып алғандар. Бында врачтар ҙа, токарҙар ҙа, пекарҙар ҙа, шәкерттәр ҙә, студенттар ҙа, элекке һалдаттар ҙа, әсәләр һәм атайҙар ҙа бар. Бөтә ерҙә лә: ағас баштарында ла, ата-әсәләренең ҡулбаштарында ла, әсәләренең ҡосаҡтарында ла балалар. Элекке фронтовик үҙе менән йәнәшә торған кешегә: «Был егет бөтә батыр һалдаттарҙы ла уҙып китте. Мин күп тапҡыр атакаға барғаным бар һәм пулемет өҫтөнә барыуҙың нисек икәнлеген беләм» ти. Әсә үҙенең улын күкрәгенә ҡыҫып: «Иләнә, был кемдә ошомо» тип әйтәшә.

Ҡайын япраҡтары тын ғына ҡыштырҙайҙар. Ваҡ ҡоштар әкрен ғына сутылдай. Ҡала тауышы ишетелмәй, бары тик йөрәктең генә йыш һәм ҡаты тибеүен һиҙәһең.

Ә һалдат алыҫҡа ҡарап тора.

* * *

Төрлө эпохала йәшәүсе кешеләр төрлө һәйкәлдәр эшләгәндәр. Кешеләр әкиәттәге аллаларҙы һәм геройҙарҙы маҡтағандар, парламент эргәһендә һәм океан ярҙарында улар бик ҙур статуялар ҡуйғандар. Тауҙарҙан да бейегерәк пирамидалар төҙөлгән. «Билгеһеҙ һалдаттарҙың ҡәберлеге» бар.

Һинең һәйкәл уларҙың бөтәһенән дә айырылып тора. Ул халыҡтың дөйөм ихтирамы һәм ғорурлығы символы.

Буржуаз философтар батырлыҡҡа ҡарағанда ҡурҡаҡлыҡты, һәйәү тойғоһона ҡарағанда ҡурҡыуҙы өҫтөн күрәләр. Буржуаз яҙыусы Жан Жион тарафынан ижад ителгән «мораль» бына ниндәй: «Арыҫлан булып бер йыл йәшәгәнсе, һарыҡ булып йөҙ йыл йәшәүең яҡшы».

Һин, Совет иленең улы, арыҫлан тормошон яҡшыраҡ тип таптың.

Нимә һине герой яһаны; иң киткес осорҙо йәки батырҙар көсөмө?

Тегеһе лә бынаһы ла. Беҙҙең эпохабыҙ алға барыу ваҡыты, кешелектең быуаттар буйына килгән хыялын тормошҡа ашырыу ваҡыты. Совет осоронда подвигтар яһамаҫҡа мөмкин түгел, сөнки патриотизм кешеләрҙең иң юғары тойғоһо булып әүерелде.

Батырҙар көсөн һинә һине тыуҙырған халыҡ бирҙе. Беҙ һинең ҡыйыу һәм батыр, тоғро һәм дуҫ туғандарҙың өлкән туғаны рус халҡының улы булыуың менән ғорурланабыҙ.

Бөйөк Сталин рус халҡы тураһында былай тине: «Мин рус халҡының һаулығы өсөн уҙ етәксе халыҡ булғанға ғына түгел, бәлки шуға күрә тост күтәрәм, сөнки уның яҡты аҡылы, ныҡлы характеры һәм түҙемлелеге бар».

Һин, Саша, башҡа эпохала булыуы мөмкин булмаған подвиг яһап, үҙ халҡының ошо гүзәл сифаттарын раҫланың.

Ҡайһы ваҡытта: Саша үҙен ҡорбан итмәй ҡала алыр инеме? тип һорайҙар. Булдыра алмаҫ ине. Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ өсөнсө йылдың 23 февраль көнө иртәһен хәтерләйек. Һуғыш башланғандан һуң гвардия полкының беренсе ротаһының алға барыуына үҙенең уты менән ҡамасаулыҡ итеүсе ҡурҡныслы дзот ҡалҡып сыҡты. Дошмандың ошо дзотын юҡ итмәй тороп, алға барыу мөмкин түгел ине. Приказды үтәмәҫкә йәки уны үтәүҙе кисектерергә тигән уй бер кемдең дә башына килмәне, сөнки Тыуған илдең изге приказында: был көндә тағы ла бер рус ауылын — Чернушканы азат итергә тейелгәйне. Рота командиры ротала булған барлыҡ техниканы, ҡоралдарҙы файҙаланып, бөтә сараларҙы күрҙе. Ул дошмандың ут точкаһын юҡ итеү өсөн икешәр тапҡыр өсәр автоматчик ебәрҙе. Һәм шунда уҡ рота командиренең рөхсәте менән үҙенең хәрби бурысын үтәү өсөн Александр Матросов һуғышҡа инде. Ул үҙенең йөҙҙәрсә иптәшен атакаға күтәрелә алһын өсөн героик ҡарар ҡабул итеүгә, — ул ут сәсеүсе амбразураны үҙенең кәүҙәһе менән ҡаплауға тиклем, бөтә оҫталығын, техниканы ҡулланып, һуңғы патронына тиклем дошманға атты.

Саша приказды үтәмәйенсә ҡайта алмай ине. Ул үҙ-үҙенә: «Мин һуғыш алам әле. Мин үҙ бурысымды үтәрмен, иптәш Сталин» — тине. Коммунизм һалдаты, гвардияһы рядовойҙың һуңғы тапҡыр әйткән һүҙе — иптәш Сталин исеме ине.

Матросовтың подвигына тиклем бер нисә ай элек иптәш Жданов былай тигән ине: «Гвардиясы — юғары хәрби оҫталыҡҡа өлгәшкән һәм уны арттырыуҙан туҡтамаған батыр совет воины. Уның характерлы черталары — фиҙакәр батырлыҡ, ныҡлылыҡ, ынтылышлылыҡ, Уның Тыуған илгә булған мөхәббәте икһеҙ-сикһеҙ. Уның еңеүгә ҡарата булған ихтыяры тотоп тыйғыһыҙ, дошманды ҡыра алмаусылығы икһеҙ-сикһеҙ, боевой рухы бөтмәҫ-төкәнмәҫ».

Саша гвардиясының почетлы һәм яуаплы бурысын үтәне.

* * *

Һин тыныслыҡ һалдаты инең. Саша һуғыштан тыныслыҡ яулап алды.

Беҙ еңеү көнән ер шарында оҙаҡ ваҡытлы һәм ныҡлы тыныслыҡтың башланыуы тип билдәләгәйнек. Ваҡиғалар беҙҙең ышанысты алданылар.

Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ биренсе йылда тыуған бала мәктәпкә йөрөр йәшкә лә етмәгән әле. Һуғыштан зыян күргән бөтә ҡалалар ҙа яраларын төҙәтеп бөтмәнеләр әле. Ә һуғыш көстәре яңы тыныслыҡ көстәренә һуғышҡа [...] «Немец блогының» яңы [...] Мейснер «Американлылар СС [...] булһа бәхетле булырҙар ине» тә [...] Люишес Клейт «Атлантик пакт [...] сә ярҙамында булһа ла тыныслыҡты тәьмин итер» тип һөрәп һала.

Совет воиндары донъяны фашизм ҡыҫымынан ҡотҡарып алып ҡалған [...] американлылар атом бомбаһын [...] икенсе бөтә донъя һуғышын [...] ҡарата хәл иткес көс менән» [...] ҙы тәьмин итеүгә килтерергә тейеш [...] хыялланһылар. Хәҙер американлылар [...] рә уҡ былай тип яҙалар: «[...] иронияһы шунда, беҙ Германия [...] Японияға ҡаршы һуғышта Совет [...] һы яғында тороп һуғышҡанбыҙ [...] хәҙер Германияны һәм Японияны [...] ға ҡаршы ҡоралландырыуға [...] литикаһын үткәрәбеҙ».

Немец фашистарын Америка фашистары алмаштырҙылар. Улар ҙа [...] итергә хыялланалар. Донъя [...] тергә: тыныслыҡ яҡлылар һәм [...] яҡлылар лагерына бүленде.

Ошо яуаплы сәғәттә совет [...] иртәгеһе көндә ҙур өмет һәм ышаныс [...] нән ҡарашалайҙар, сөнки тыныслыҡты [...] лыҡты еңәсәк. Һинең исемең бөйөк [...] тыныслыҡтың бөйөк һәйкәле [...]

Халыҡ үҙенең данлы улдарын [...] һин, Саша Матросов, бөтә ер [...] ларға һәм дәреслектәргә индең. Һин [...] нералдар һәм һалдаттар честь бирә [...] тәлдәрҙә лә шәкерттәр һинең [...] йырлайҙар. Совет иленең бөтә [...] һинең һуғыш алынан барған [...] ҡабатлайҙар: «Әгәр үҙемдең [...] Ватан өсөн, иптәш Сталин өсөн [...] талап ителә икән, уны бирермен. [...] ҡорал тота алғанда, йөрәгем [...] туҡтағанға тиклем дошманға ҡаршы [...] ғышырмын!». Һинә иң ҙур баһа [...] сыбыҙ Сталин тарафынан бирелде [...] тәш Матросовтың бөйөк подвигы [...] Армияның бөтә воиндары өсөн ғәскәри батырлыҡ һәм геройлыҡ өлгөһө булып хеҙмәт итергә тейеш».

Һине бөтә донъя хәтергә ала. [...] танкыһын Сеул янында туҡтатып [...] реең һинең подвигыңды ҡабатланы. [...] армияһы һалдаттары тоғроһоғо [...] тырлыҡҡа һинән өйрәнәләр. Һин [...] тырлығың испан партизандары [...] тыныслыҡты яҡлаусы Ҡытай [...] рә әшенә йәшәй. Һин яһаған [...] виг һине терелер сафында [...] һин һәр көндең йөрәгендә.

Аҡ күгәрсендәр иртәнән [...] тиклем һинең өҫтөңдән осорҙар. [...] ҙары һине иғтибар менән [...] ҙар. Һинең һәйкәлең хуш еҫле [...] һәм бәхетле балалар араһында [...] һин һәр көндә һәр сәғәт кешеләрҙе [...] ланыу һәм шатланыу менән [...] ошатырһың.

Александр Матросов кеүек [...] мәйҙәр. Ул халыҡтың хәтерендә [...] роик эштәрендә мәңге йәшәр. [...] ла тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн [...] селәр матросовсыларҙың исемдәрен [...] лыҡ менән йөрөтәрҙәр.

Әнүәр Бикчәнтәев.

Баязит Бикбай

МАТРОСОВ ҺӘЙКӘЛЕ

Матросовҡа һәйкәл асылды
Өфөбеҙҙең Үҙәк паркында.
Беҙ кисерҙек был гүзәл минутты
Ҡойоп торған ямғыр аҫтында.
Бер кем ҡымшанманы.
Ямғыр, ямғыр. . .
Бәлки пуля шулай яуғандыр?..
Ҡапыл күҙ алдыма килде
Матросовтың
Үлем күҙенә ҡарап барғаны.
Ямғыр ҡоя, уға үс иткәндәй,
Ҡара брезент ирекен асылды, —
Матросов!
Гүйә, баҡса уртаһына
Килеп ҡунды Урал ҡыяһыны!

Уның йөҙө тыныс,
ышаныслы,
Автоматы әҙер ҡулында;
Ул киләсәккә күҙ текәгәндәй, [...]
Ленин урамының буйына.
Ниндәй киң юл!
Ошо ола юлдан
Кешеләр данлы эшкә уҙалар;
Ә Матросов, тыныслыҡты һаҡлап,
Күҙ ҙә алмай тора уларҙан.
Бик күп йылдар уҙыр,
Яуыр ямғыр,
булыр буран,
ҡубыр дауыл да...
Матросов — үлемһеҙ йәш кеше —
Торор һаман йәшәү һағында!



9 майҙа А. Матросов исемендәге культура һәм ял паркында Советтар Союзы Геройы Александр Матросовҡа һәйкәл асыу айҡанлы митинг булды.
Һүрәттә: (уңдан һулға) 1. Яҙыусы Ә. Бикчәнтәев митингыла сығыш яһай. (Трибунала алғы планда) Башҡортостан АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе Ф. Заһафуранов, ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары С. Ваһапов. 2. Александр Матросовтың һәйкәле, уға Өфө хеҙмәтсәндәре веноктар һалалар. 3. Ҡала хеҙмәтсәндәре митингыла.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Колхоз ауылы тураһында гүзәл роман

«Фабрикаларҙа һәм заводтарҙа, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа хеҙмәттең төп ауырлығын үҙ елкәләренә күтәреп барған совет ҡатын-ҡыҙҙарының һәм данлыҡлы Башҡортостан тиңдәшһеҙ хеҙмәт батырлыҡтары мәңгегә тарихҡа инер. Ватандың намыҫы һәм бойондороҡһоҙлоғо яҡлап совет ҡатындары, сеҫтерҙә һәм ... фронтында батырлыҡ күрһәттеләр. Улар Ватаныбыҙы немец-фашист ауыҙҙарынан һаҡлаусы аталарыбыҙ һәм улдарыбыҙ, ... Сталин Ватан һуғышының героик йылдарында.

Татар совет яҙыусыһы Гүмәр Бәширов «Намыҫ» романында Бөйөк Ватан һуғышы осоронда татар колхоз ауылы хеҙмәтсәндәренең тормошон, фиҙаҡәр эшен, ... күрһәтә ...

Лаҡин ... һуғыш ваҡыты ... хеҙмәте ... алып бара ... «Чулпан» колхозы члены Тимери ҡарт ...

... тыл колхоз председателе итеп һайланып ... ауыр һәм колхозсылар уның ...

«...бит ниндәй Сталин нәмә ... өйтте? Беҙ бер булып ... беҙҙең урыҫтар, татарҙар ...

Нәфисә ...

Ә бит ... Галина ...

рәтехника ҡағиҙәләрен оҫта ҡуллана, колхоз өсөн бөтөнләй яңы булған методтар табыла, бойҙай бөкрән үҫә. Ил өсөн, фронт өсөн, элекке агроном, хәҙер армияла комиссар булған ире Ғәзиз өсөн был итеҙәр!

Ләкин Ғәзизгә уларҙы күрергә тура килмәне. Ул ҡенәнә бер нисә тапҡыр ҡабатланып торған атакала һәләк була.

Ғәзиз үҙе үлә ҡалһа, Нәфисәгә тапшырыу өсөн хат яҙып ҡалдырған:

«...минең үлеүем бик ихтимал. Хатта бында тәжәлдәнерлек бер нәмә лә юҡ. Мин коммунист, комиссар. Минең үҙемдең бәҫтәрым менән ҡенәнә унар тапҡыр атҡаға барған саҡтарым була.

...һин беләһең, шундай рәхәт ине беҙҙең илдә йәшәү һәм мин уның тағы ла

Колхоз ауылының алдынғы кешеләре, партия ойошмаһы был хәл менән артабан да килешеп ҡала алмайҙар, дейөм йыйылыш Сайфиҙә правлениэ председателлегенән бушата.

Кемдә етәкселекҡа ҡуйырға? Ауылда йәш үҫмерҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар, йәш кешеләр, ҡарттар ғына. Бына уларҙың береһе Тимери ҡарт. «Ул һуғыш алдынан бер ваҡыт дилбегәне бөтөнләй балалар ҡулына тапшырырға ла уйлап бөтөргән кеше ине:

— «Ҡартлыҡ баҫа ахырыһы, етенсе тиҫтәгә атлай башлағас, һиҙелә икән ул!» — тигеләп, арҡа-елкә һыҙлауы, тынь ҡыҫылыуы тураһында зарланғылай башлағайны».

ҡыҙмәте ... үҫтереп, юғары ... күтәреп ...

Талантлы роман киңап уҡыусыларҙың мәхәббәтен ҡаҙанды һәм уның авторы Гүмәр Бәшировҡа ҙур ижади хеҙмәте өсөн СССР Министрҙар Советы ҡарары менән икенсе дәрәжәле Сталин премияһы бирелде.

Гүмәр Бәширов китап уҡыусыларға күптән таныш. Ул граждандар һуғышының героик көндәрен тулы ҡанлы итеп күрһәткән «Сиваш» повесе менән татар совет әҙәбиәтенә үҙен талантлы, үҫә торған яҙыусы итеп тәҡдим иткән булһа, «Намыҫ» романы менән бөтә татар совет әҙәбиәтен яңы, юғары баҫҡысҡа күтәрҙе.

З. Ишмаев.

МӘКТӘПТӘРҘӘ ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫНА ӘЛГӘЛӘ ӘҘЕРЛӘЙЕК!

Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәренең сакырыуы буйынса

Мәсетле районының Ростов ауылы хеҙмәтсәндәре һәм ете йыллыҡ мәктәп уҡытыусылары Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәренең мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әлгәрәк әҙерләү буйынса социалистик ярышҡа саҡырыуы ...

Беҙҙә мәктәп бинаһында ... 1951 — 1952 уҡыу йылына ...

Мәктәпкә, класс инвентарҙарын ремонт ...

Мәктәп ... ата-әсәләр ...

Мәктәп эргәһендә емеш-еләк баҡсаһы ... спорт майҙаны ...

Беҙҙең мәктәп коллективы ...

Р. Хәлимов,
Мәсетле районы Ростов ете йыллыҡ мәктәбе директоры.

Конкрет эш башланды

Бөрө. (Телефон аша үҙ хәбәрсебеҙҙән). Район хеҙмәтсәндәре Дүртөйлө районы хеҙмәтсәндәренең мөрәжәғәтен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ... ҡаршыланы. ...

Ыласҡынтау ете йыллыҡ мәктәбенә уҡытыусылар коллективы менән ата-әсәләр, ауыл Советы депутаттары ҡатнашлығында йыйылышы булып үтте. Йыйылыштан һуң уҡ конкрет эш башланды. Мәктәп эргәһендә 0,7 гектар майҙанда емеш-еләк ағастары ултыртылды, спорт майҙаны йыһазландырылды.

Пономаревка ауыл Советы хеҙмәтсәндәре уҡытыусылар өсөн 50 кубометр утын әҙерләнеләр һәм ташып ҡуйҙылар, шулай уҡ бында мәктәп бинаһына тышҡы ремонт эштәре башланды.

Х. Сафин.

Әҙерлек яҡшы ойошторолдо

Өфө ҡалаһындағы 27-се номерлы урта мәктәп коллективы (директоры иптәш П. Логинов) дүртөйлеләрҙең мөрәжәғәтен ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланы.

Мәктәпте яңы уҡыу йылына әлгәрә әҙерләү өсөн бөтә саралар күрелә. Хәҙер ремонт эштәре башланды. Бының өсөн 1800 табаҡ ҡалай, 1 тонна аҡбур, буяуҙар һәм башҡа төҙәлеш материалдары килтерелде.

Ремонтты тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп башҡарыу өсөн Молотов райжилуправлениеһе эргәһендәге төҙәлеш контораһы менән договор төҙәлде.

Мәктәпкә шефлыҡ итеүсе резина заводы (директоры иптәш Ткаченко) 180 кубометр утын ташыны, беренсе номерлы төҙәлеш управлениеһе (управляющийы иптәш Шабанов) күп кенә төҙәлеш материалдары бирҙе.

Ғ. Үлмәсов.

Ауыл Советы председателе трибунаһы

План—уңыштарҙың нигеҙе

... ауыл Советының эшмәкәрлеге ... депутаттар ...

... Колхоздарҙы ...

Беҙ план тәртибендә хеҙмәт ...

... бер ...

Ауыл Советының ...

хәбәр итәбеҙ. Көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәлә буйынса ауыл Советы депутаттарын колхозға ебәрәбеҙ. Улар эштең торошон өйрәнәләр, председателгә үҙенең информацияһын нисек төҙөргә кәрәклеген өйрәтәләр. Бындай сара ултырышта ҡаралаcаҡ мәсьәләне ауыл Советына дөрөҫ аңлау һәм дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү, ҡарарҙың үтәлешен тәьмин итеүҙә дөрөҫ ойоштороу мөмкинлеген бирә. Ултырышҡа ҡуйыласаҡ мәсьәлә буйынса исполком члендары һәм актив тә алдан әҙерләнәләр.

... үҫешкә тәҡдимдәр һәм уны яҡшы сифатлы итеп башҡарыу өсөн көрәшәләр.

Яҡшы итеп төҙөлгән план ярты ғына эш әле. Уны үтәү өсөн ойоштороу һәләтлегенә эйә булырға, үтәлеште систематик тикшерергә, кәстәрҙе дөрөҫ урынлаштырыуҙы тәьмин итергә, артта ҡалған участкаларға ваҡытында ярҙам күрһәтергә кәрәк. Беҙ бына шулай эшләү өсөн көрәшәбеҙ.

Шәриф Мортазин,
Мәсетле районы, Олы Аҡа ауыл Советы председателе.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Шефлыҡ ярҙамы ҡасан юлға һалыныр икән?

Бынан бер йыл элек Ҡырмыҫҡалы районы үҙәгендә электр станцияһы эшләй ине. 1950 йылдың март айында, электр станцияһы двигателенең поршень балдаҡтары туҙғанлыҡтан, район коммуналь хужалығы инспекторы иптәш Н. Моратов уларҙы Өфө механика заводына ремонтҡа тапшырҙы һәм 580 һум аҡса түләне. Хәҙер бер йылдан артыҡ ваҡыт үтте. Механика заводы поршень балдаҡтарын эшләгәне юҡ.

Район коммуналь хужалығы работниктәре балдаҡтарҙың эшләнешен белеү өсөн Өфөгә 10 тапҡыр барып ҡайттылар. 600 һум расход тотолдо. Ләкин механика заводы етәкселәре беҙҙе тик буш ышандырыуҙар менән генә йыуаталар. Тағы ла күпме ваҡыт йөрөрбеҙ икән? Билдәһеҙ. Район үҙәгендә хәҙер икенсе йыл инде электр станцияһы эшләмәй.

Шуныһы ғәжәп, Өфө механика заводы етәкселәре быйылғы урожай йыйыу кампанияһында ла ауылға шулай «ярҙам итергә» йыйыналармы икән?

Ғ. Шарафетдинов,
Ҡырмыҫҡалы район Советы исполкомы председателенең урынбаҫары.

„Ҡыҙыл Башҡортостан“ материалдары буйынса

„Күсәкле кеше һәм райком“

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 52-се номерында Бөрйән районы «Ҡыҙыл таң» колхозының председателе Бикмөхәмәтовтың ауыл хужалығы артеле хужалығын таркатыуы, граждандарҙы туҡмауы һәм район партия, совет һәм прокуратура органдары работниктәренең быға килешеп ҡарауҙары тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Бөрйән район комитеты редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Күсәкле кеше һәм райком» тигән темала «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған хәбәр ВКП(б) район комитетының бюро ултырышында тикшерелде һәм унда күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ҡарата тейешле ҡарар ҡабул ителде. Бюро, коммунист иптәш Ғәлингә «Ҡыҙыл таң» колхозынан законһыҙ рәүештә алған һарыҡты һәм бер килограмм йөндө артелгә кире ҡайтарырға, ә коммунист Ҡотлоғәлләмовҡа законһыҙ алған бесәндең хаҡын түләргә тәҡдим итергә, тигән ҡарар ҡабул итте.

Партияға хас булмаған ҡылыҡы өсөн һәм тапшырылған эшкә яуапһыҙ ҡарағаны өсөн ВКП(б) район комитетының ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Ҡондоҙбаевҡа ҡаты иҫкәртеү яһалды.

Район прокуроры иптәш Латыповҡа «Ҡыҙыл таң» колхозының элекке председателе Бикмөхәмәтовтың эшен тикшереү һәм уны яуапҡа тарттырыуҙы оҙаҡҡа һуҙғанлығы күрһәтеп үтелде».

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Пар һөрөүҙе тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп үткәрергә

Ужым сәсеүлектәренең урожайын күтәреү өсөн пар баҫыуҙарының ваҡытында һәм дөрөҫ эшкәртелеүе шарт. Һөрөүҙә төп маҡсат — тупраҡты ҡый үләндәренән таҙартыу, ужымдарҙы сәскәнгә тиклем тупраҡта етерлек туклыклы матдәләр булдырыу, күберәк дым туплап ҡалыуҙан тора. Был шарттарҙа уңышлы үтәү өсөн пар баҫыуҙарын мөмкин тиклем иртәрәк һөрөп, яҡшы итеп эшкәртергә кәрәк.

Үткән йыл Архангель, Балтач, Тәтешле һәм башҡа райондарҙың күп кенә колхоздарында пар һөрөүҙе һуңға ҡалдырҙылар. Ҡайһы бер колхоздарҙа пар баҫыуҙарында бесән сабыу өсөн йәки малдарҙы ютеү өсөн тигән һылтау менән оҙаҡ ваҡыттар парҙы һөрмәй торҙолар. Һай, сөй малдарҙан һөрөү, йәки предплужникһыҙ һабандар менән һөрөү кеүек, агротехниканы тупаҫ боҙоу фактары ла булды. Пар баҫыуҙарын тиреҫләү, шулай уҡ башҡа төрлө органик һәм минераль ашламалар менән ашлау әле булһа тейешле дәрәжәлә ҡулланылмай. Миәкә, Бәләбәй, Миәкә, Бәзәлә һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың колхоздарында һөрөлгән пар баҫыуҙары үҙ ваҡытында эшкәртелмәнеләр. Һөрөмтәлә пар баҫыуҙарын ҡый үләндәре баҫып китте, ужым сәсеү алдынан парҙы ҡайтанан һөрөргә тура килде. Шуға сәбәпле күп кенә колхоздарҙа ужымды, ултырып етмәгән көпшәк һәм ҡоро тупраҡҡа сәстеләр. Был әйтеп киткән етешһеҙлектәр ужымдарҙың урожайын күтәреү эшенә ҙур зарар килтерҙеләр. Шуға күрә быйыл был хаталарҙы ҡабатлауға юл ҡуйырға ярамай.

Хәҙер республикабыҙҙың күп колхоздары яҙғы сәсеүҙе тамамлап киләләр. Иртә культураларҙы сәсеп бөтөргән һәм һуңғы культураларҙы сәсеү өсөн тупраҡты әҙерләп ҡуйған колхоздар хәҙер бик күп инде. Тимәк, һәр бер районда пар һөрөү эшенә ныҡлап тотонорға тулы мөмкинлек бар. Ләкин шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер МТС һәм колхоздарҙа, сәсеү эштәренән бушаған тракторҙарҙы һәм йәнле тартыу көстәрен тиҙерәк пар һөрөү эшенә күсереү сараһы күрелмәй әле. Шулай уҡ ҡайһы бер МТС-тарҙа тракторҙар төҙәк булмау сәбәпле, улар күп ваҡыт эштән туҡталып торалар. Бигерәк тә Күгәрсен, Чапаев, Арслан, Күндрәк, Мишкә, Хәйбулла, Сибай МТС-тарында тракторҙарҙы өҙлөкһөҙ эшләтеү өсөн етерлек сара күрелмәй, улар йыш ватылалар, ҡайһы бер колхоз правлениелары даими прицепщиктар бирмәйҙәр, ваҡытында тракторҙарҙы яғыулыҡ һәм һыу менән тәьмин итмәйҙәр. Бындай етешһеҙлектәрҙең булыуы яҙғы сәсеүҙә тиҙерәк тамамлау өсөн ҙур ҡамасаулыҡ тыуҙыра һәм пар һөрөүҙе лә һуңлатыуға килтерә. МТС һәм колхоз етәкселәре, механизаторҙар тракторҙарҙы өҙлөкһөҙ эшләтеү өсөн һис киҫекмәҫтән конкрет саралар күрергә тейештәр.

Быйыл республикабыҙҙың колхоздарында 90 проценттан артыҡ пар майҙаны МТС-тар көсө менән башҡарыласаҡ. Колхоздарҙың йәнле тартыу көсө менән һөрөү өсөн тик 10 процент самаһы ғына пар майҙаны ҡала. Тимәк, был эштә төп бурыс МТС механизаторҙарына йөкмәтелә. Шуға сәбәпле тракторҙарҙың тулы ҡеүәтендә өҙлөкһөҙ эшләүҙәре пар һөрөү планын хөкүмәт тарафынан билдәләнгән срокта тамамлауҙы хәл итәсәк. Иртә таҙа пар һөрөү эше республика күләмендә 10 июндән дә һуңға ҡалмайынса тамамланырға тейешле. Был һуңғы срок. Республикабыҙҙың күпселек колхоз һәм МТС-тары иртә таҙа парҙы май айында уҡ һөрөп бөтөрөргә тейештәр. Бының өсөн быйыл бөтә мөмкинлектәр бар. Һәр бер трактор һәм йәнле тартыу көсө сәсеүҙән бушаған көндө уҡ пар һөрөү эшенә күсерелергә тейеш, һәр бер колхоз, трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаһы пар һөрөү графигын ваҡытында үтәү өсөн ныҡ көрәш алып барырға бурыслылар. Бының өсөн кәрәк һандағы тракторҙарҙы һәм йәнле тартыу көсөн пар һөрөү эшенә күсерергә, тракторҙарҙы ике сменала эшләтергә, трактористар араһында сәғәт графигы менән эшләүҙе киң ҡулланырға, һәр бер тракторист, һабансы тарафынан смена һәм көндәлек эшләп сығарыу нормаларының үтәлеүен тәьмин итергә, тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә эшләтергә кәрәк буласаҡ. Был шарттарҙы үтәү өсөн МТС һәм колхоздар тарафынан трактор бригадаларына кәрәк булған ярҙам ваҡытында күрһәтелергә тейеш. Тракторҙарҙы һәм тағылма инвентарҙарҙы ваҡытында техник тәрбиәләү, яғыулыҡ, майлау материалдары һәм һыу менән тракторҙарҙы өҙлөкһөҙ тәьмин итеү, уларға бураҙнала заправка яһау, һәр бер трактор сменаһына даими прицепщиктар беркетеү, трактористарға эш һәм культура-тормош шарттары тыуҙырыу сараларын күргәндә, тракторҙарҙың юғары етештереүсәнле эшләүҙәрен ныҡ күтәрергә мөмкин.

Шуның менән бергә, пар һөрөүҙең сифатына айырыуса иғтибар бирергә кәрәк. Пар ерҙәрен бары тик предплужникле һабандар менән, 22 сантиметр тәрәнлектә генә һөрөү талап ителә. Әгәр ҙә һөрөү ҡатлауы йоҡараҡ икән, ул ваҡытта уның тулы тәрәнлегенә һөрөргә кәрәк.

Башҡортостан ғилми-тәжрибә учреждениеларының һәм колхоздарҙың практикаһы пар баҫыуҙарында һөрөү ҡатлауын тәрәнәйтеү һәр гектарға 2-3 центнер һәм артығыраҡ өҫтәмә урожай биргәнлеген күрһәтәләр. Мәҫәлән, 1940 йылды Өфө тәжрибә баҫыуында иртә парҙы 25 сантиметр тәрәнлектә һөрөү арҡаһында гектарынан 2,7 центнер өҫтәмә арыш урожайы алынды. Бөрө тәжрибә баҫыуында тиреҫләнгән иртә парҙы 25 сантиметр тәрәнлектә һөрөү гектарынан 4,5 центнер өҫтәмә арыш урожайы бирҙе. Тимәк, пар баҫыуында һөрөү ҡатлауын тәрәнәйтеү, ужым игендәренең урожайын күтәреүҙә әһәмиәтле резерв икәнен раҫлай. Быны иҫкә алып, хөкүмәт тарафынан быйыл МТС-тарға пар баҫыуҙарында һөрөү ҡатлауын тәрәнәйтеү планы тапшырылды. Ҡара тупраҡлы ерҙәрҙә 25 — 30 сантиметр тәрәнлектә һөрөү, ә инде ҡалһыу тупраҡлы ерҙәрҙә һөрөү ҡатлауын 3-5 сантиметр тәрәнәйтеү талап ителә. Һөрөү ҡатлауын тәрәнәйткәндә «ерҙән балсығы» тигән үлән өҫкә сыға. Бигерәк тә ҡолһыу тупраҡлы ерҙәрҙе ашлама индермәйенсә һөрһәң, өҫкә сыҡҡан «ерҙән балсығы» культуралы үҫемлеккә насар тәьҫир итеүе мөмкин. Шуға күрә һөрөү ҡатлауын тәрәнәйтелгән ерҙәргә гектарына иң кәмендә 20-30 тонна тиреҫ, фосфорит оно, йәки фосфорит оноҙ тиреҫ һәм торф менән аралаштырып индереү мәжбүри булып тора. Тупраҡты тиреҫләп тәрәнәйтеүҙең яҡшы һөҙөмтәләрен Бөрө тәжрибә баҫыуының 1941—1942 йылдарғы тәжрибәһенән асыҡ күрергә мөмкин. Мәҫәлән, гектарына 40 тонна тиреҫ индереп 26—28 сантиметр тәрәнлектә һөргән парҙан гектарынан 20,5 центнер арыш урожайы алынды. Ә инде тиреҫләнмәйенсә 20 сантиметр тәрәнлектә һөргән парҙа арыштың урожайы гектарынан бары тик 15,07 центнер генә тошкил итте. Шуның өсөн хәҙерҙән үк һәр бер колхозда һөрөү ҡатлауын тәрәнәйтәсәк ерҙәрҙе билдәләп, унда тиреҫ, торф, фосфорит оно индереү һәм был участкаларҙы беренсе нәүбәттә һөрөү сараһын күрергә кәрәк.

Күп кенә колхоздарҙа пар баҫыуҙары аҡтамыр һәм ҡара һоло менән сүпләнгән. Бындай ерҙәрҙе эшкәртеүгә айырыуса иғтибар бирергә кәрәк. Аҡтамыр пар баҫыуҙарын һөрөү алдынан дискалы культиваторҙар менән арҡылы-буй эшкәртергә кәрәк. Культиваторҙарҙың дискалары тәрәнерәк батһын өсөн уның өҫтөнә ауыр балласт һалырға мөмкин. Тупраҡты шул рәүештә эшкәрткәндә аҡтамыр тамырҙары ваҡ-ваҡ ҡына булып өҙгөләнә. Бер нисә көндәр үткәс, тамыр өҙөмтәләренән аҡтамыр үләне сыға. Аҡтамыр үләне тупраҡ өҫтөндә күренеү менән тәрән итеп, предплужникле һабандар менән һөрөргә кәрәк. Шул ваҡытта көҫ аҫтында тәрән күмелеп ҡалған аҡтамыр артабан тишеп сыға алмай, тонсоғоп һәләк була.

Ҡара һоло менән ҡыйҙанған пар ерҙәрен, башта һай ғына лущить итеп, бер нисә көндән, ер өҫтө йәшелләнә башлағас та, тәрән итеп һөрөргә кәрәк.

Агрономдар пар баҫыуҙарын эшкәртеүҙә колхоздарға практик ярҙам күрһәтергә бурыслылар. Был эштә бөтә колхоздарға ла шаблонлы, бер төрлө генә кәңәш биреү ярамай. Һәр бер колхоздың, айырым баҫыуҙарының үҙенсәлегенә, тупраҡтың тәрәнә, дымлылығына, сүпләнгәненә ҡарата уны эшкәртеү ысулдары ла төрлөсә булырға мөмкин. Шуның менән бергә, агрономдар пар ерҙәрен һөрөү һәм эшкәртеүҙең сифатына айырыуса иғтибар бирергә, агротехника ҡағиҙәләренең тулыһынса тормошҡа ашырылыуын тәьмин итергә тейештәр.

Агроном Ғ. Ашимов.

«Ленинсе» газетаһы призына үткәрелгән эстафетала Өфөнөң 3-сө номерлы ҡыҙҙар мәктәбе командаһы беренсе урынды алды.
Һүрәттә: Еңеүсе команда. (Һулдан уңға) Рена Зуева, Нэлли Белоярцева, Валерия Станкевич, Маргарита Макуха. А. Червинский фотоһы.

Башҡорт театрының йәйге гастролдәре

9 майҙа Башҡорт государство Академия драма театры артистәре йәйге гастролдәргә киттеләр. Улар Ташкентта һәм Үзбәк ССР-ының башҡа ҡалаларында Мостай Кәримдең «Яңғыҙ ҡайын», Хәйҙәровтың «Ирәндек буйында», Назар Нәжмиҙең «Яҙғы йыр», Әхмәтшиндең «Тальян гармонь», Ҡадир Даяндың «Таңсулпан» һәм Мәжит Ғафуриҙең повесе буйынса эшләнгән Ғ. Әмири һәм Ғ. Ғәлимовтың «Ҡара йөҙҙәр» пьесаларын күрһәтәсәктәр.

Был пьесаларҙа РСФСР-ҙың халыҡ артисе Ғ. Минһажев, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артистәре А. Мөбәрәков, Б. Йосопова, Башҡортостандың атҡаҙанған артистәре Сыртланов, Туҡаев, Садиҡова, артистәрҙән Янбулатова, Ҡудашев, Иғҙәүләтов, Вахитова, Сәүбәнова, Ғәләмов һәм башҡа иптәштәр ҡатнашасаҡтар.

Театрҙың икенсе труппаһы 1 июндән Чиләбе өлкәһе ҡалаларына һәм республикабыҙҙың район үҙәктәренә гастролдәргә китәсәк. Улар Сталин премияһы лауреаты Мөхтәровтың «Аллаяр семьяһы», И. Абдуллиндең «Йәмле Ағиҙел буйҙары», Нәҡи Исәнбәттең «Хужа Насыретдин» пьесаларын ҡуясаҡтар.

Труппаның составында РСФСР-ҙың халыҡ артисе Әмин Зәбиров, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артистәре Ғ. Карамышев, В. Ғәлимов, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Т. Бикташева, артистәрҙән Вахитов, Сөләйманов, Әхтәмова, Арсланов һәм башҡа иптәштәр бар. Был труппаның гастролдәре ике ай дауам итәсәк.

Ишпарсово сельпоһы алдынғы тип танылды

Башпотребсоюз Правлениеһе һәм потребкооперация работниктәре Союзының өлкә комитеты потребкооперация системаһы предприятиеларының һәм ойошмаларының беренсе кварталға ярыш йомғағын тикшерҙе. Социалистик ярышта еңеүсе итеп Стәрлетамаҡ райпотребсоюзының Ишпарсово сельпоһы (председателе иптәш Н. Ганюта) табылды. Был сельпо беренсе кварталдың тауар әйләнеше планын 103, ауыл хужалығы продукттарын әҙерләүҙе 221, накоплениелар заданиеһын 193 һәм пай взностарын йыйнауҙы 153 процентҡа үтәне.

Социалистик ярыш шартын уңышлы үтәгәне өсөн был сельпоға потребкооперация работниктәре профсоюзы өлкә комитетының һәм Башпотребсоюз Правлениеһының күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

Ишпарсово сельпоһының коллективы үткән йылда ла Башҡортостан потребкооперация системаһының алдынғы коллективтәре сафында булды. Уға өс тапҡыр күсмә Ҡыҙыл Байраҡ тапшырылғайны.

Коллектив өлгәшкән уңышлыҡтарын нығытыу өсөн ярышты тағы ла киңерәк йәйелдерә.

Т. Вәлиев.

Шашка буйынса турнир

Өфөлә ҡала шашкасыларының беренсе разряды өсөн квалификация турниры үткәрелә. Был бик мөһим турнир булып иҫәпләнә, сөнки Өфө ҡалаһында ошо көнгә тиклем беренсе разрядҡа эйә булған бер генә шашкасы ла юҡ.

Был турнирҙа 2-се разрядлы көслө 7 шашкасы ҡатнаша. Улар араһында Өфө ҡалаһының шашка буйынса чемпионы 11-се урта мәктәп уҡыусыһы Жерехов, республиканың алдынғы шашкасыһы художник Буянов һәм башҡалар бар.

Хәҙер 7 тур уйналды ла инде. Һәр бер тур көсөргәнешле һәм киҫкен көрәш менән үтә. Әле Жерехов алда бара. Ул 6 мөмкинлектән $5^{1}/_{2}$ очко алды.

Ф. Симкин.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

** **Шишмә** районы Маленков исемендәге колхоз фермаһында 100 баш самаһы бестужев токомло һыйыр аҫрала. Һәр бер һыйырҙан көненә 10-11-әр литр һөт һауып алына. Бында һыйыр һауыуҙа электр көсө файҙаланыла. Һыйыр һауыусылар быйыл һәр бер һыйырҙан 3500-әр литр һөт һауып алыу өсөн көрәшәләр. Колхоз государствоға инде 40 мең литр һөт тапшырҙы.

В. Кондров.

** **Күгәрсен** районы «Серп и молот» колхозы йылҡысылыҡты үҫтереүҙең йыллыҡ планын 102 процентҡа үтәне. Йылҡысыларҙан Занозин, Бархатов, Буранбаев, Сәлихов иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр.

Х. Дәүләтшин.

** **Зиянчура** малсылыҡ совхозы имән сәтләүектәрен орлап ултыртыу планын 160 процентҡа үтәне. Инәк совхозында план үтәлеше 195, Мораптал совхозында 165 процент тәшкил итте.

Б. Кочетков.

Корея Халыҡ-Демократик республикаһы хөкүмәтенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 8 май. (ТАСС). Корея Халыҡ-Демократик Республикаһы хөкүмәте БМО Генеральный Ассамблеяһы председателенә һәм Именселек Советы председателенә протест ебәргән. Унда былай тип әйтелә:

БМО Генеральный Ассамблеяһы председателенә.

Именселек Советы председателенә.

Лейк-Саксесс, Нью-Йорк.

Корея Халыҡ-Демократик Республикаһы хөкүмәте Америка интервенттәренең ҡот осҡос яңы енәйәтенә — Корея халҡына ҡаршы һуғышта бактериологик ҡоралды ҡулланыуға ҡаршы БМО алдында ҡырҡа протест белдерә.

Америка командованиеһының Алыҫ Көнсығышта был енәйәтсел актты әҙерләгәнлеге яҡшы билдәле. Макартурҙың приказы буйынса Японияла бактериологик ҡоралды массовый етештереү йәйелдерелгәйне. Матбуғатта хәбәр ителгәненсә, Макартур штабы бактериологик ҡоралды әҙерләү өсөн 1,5 миллион иен аҡса тотҡан. Заказдарҙы таратҡан ваҡытта ул Япония хөкүмәтен үҙенә ярҙамсы итеп алған.

Лисынманың хөкүмәттең Сеулды Халыҡ армияһы азат иткән ваҡытта алынған һәм Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының сит ил эштәре министрлығы тарафынан «Кореялағы граждандар һуғышын тоҡандырыусыларҙы фашлаусы документтәр һәм материалдар» тигән йыйынтыҡта иғлан ителгән йәшерен архив документтәрендә Американың хәрби советниктәре тарафынан төҙөлгән һәм етәкселек ителгән лисынмансы армия штабының, Төньяҡ Кореяға асыҡтанасыҡ һөжүм итеүгә тиклем бик күп әлек, Төньяҡҡа ҡаршы йәшерен бактериологик һуғыш алып барыуҙы пландаштырыуын һәм был пландарҙы тормошҡа ашырыу өсөн саралар күреүен кире ҡағылмаҫлыҡ итеп иҫбатлаусы факттар бар. Мәҫәлән, Көньяҡ Корея армияһы штабының разведка управлениеһының өсөнсө бүлеге тарафынан эшләнгән 1950 йылға разведка эшенең «А» планына ярашлы рәүештә: 1) армия кухняларын, 2) полиция столовойҙарын, 3) армия, хөкүмәт, партия һәм башҡалар тарафынан ойошторолған банкеттар өсөн биналарҙы, 4) ҡала һыу яткылыҡтарын һәм йылғаларын, 5) армия, хөкүмәт һәм партия етәкселәренең йорттарын (юғарыла әйтелгән йыйынтыҡтың 18-се документен ҡарағыҙ) бактериялар менән йоғошландырыу бурысы ҡуйылған. Көньяҡ Корея армияһы штабының разведка эшенең «В» планы юғарыла әйтелгән «А» планын конкретлаштырып, Төньяҡ Корея территорияһында, Нампхо, Вонсан, Синыйджу, Пхеньян, Хамхын, Чхончжин, Чхолвон, Хэчжу, Хыннам, Сончжин һәм башҡа ҡалаларҙа, шулай уҡ Халыҡ армияһы частәрендә (юғарыла әйтелгән йыйынтыҡтың 19-сы документен ҡарағыҙ) диверсион эштә үлтереүсе бактерияларҙы ҡулланыуҙы күҙҙә тотҡан.

Билдәле, был енәйәтсел пландар лисынмансыларҙы бактериологик ҡорал менән тәьмин иткән американдар күрһәтеүе буйынса төҙөлгәндәр. АҠШ хөкүмәте Америка агрессияһына ҡаршы геройҙарса көрәшеүсе Корея халҡына атом бомбаһын һәм бактериологик ҡоралды ҡулланыу менән бер нисә тапҡыр янаны. Тар-мар ителгән һәм кешелек тарафынан ғәйепләнгән япон хәрби енәйәтселәренең юлы менән барып, Макартур, Риджуэй һәм уларҙың әйәрсендәре бактериологик ҡоралды ҡулланып, был янауҙы тормошҡа ашырҙылар. Медицина экспертизаһы билдәләгәнсә, Америка ғәскәрҙәре былтыр декабрь айында Төньяҡ Кореянан сигенгән ваҡытта Төньяҡ Кореяның үҙҙәре ваҡытлыса оккупациялаған райондарының халҡы араһында сәсәк ауырыуы инфекцияһы таратҡандар, улар был юл менән сәсәк ауырыуы эпидемияһын Халыҡ армияһы ғәскәрҙәренә һәм Ҡытай добровольцтарына таратырға ымтылғандар.

Төньяҡ Корея территорияһын азат иткәндән һуң дүрт йыл буйына сәсәк ауырыуы менән сирләүҙең бер генә ваҡиғаһы ла булманы. Ә 1950 йылдың декабрь урталарында һәм 1950 йылдың ғинуарында сәсәк ауырыуы менән сирләү Америка оккупацияһынан азат иткәндән һуң 7—8 көн үткәс, бер үк ваҡытта бер нисә районда булды. Эпидемия Пхеньян ҡалаһында, Төньяҡ һәм Көньяҡ Пхеньян, Канвон, Көньяҡ Хамген һәм Хванхэ провинцияларында барлыҡҡа килде. Сәсәк ауырыуы менән сирләүселәр һаны бик тиҙ үҫте һәм апрель айына 3500-ҙән артып китте, уның 10 проценте үлем менән тамамланды. Сәсәк ауырыуы менән сирләү ваҡиғаһы 1.126 булған Канвон провинцияһында, 817 ваҡиға булған Көньяҡ Хамген провинцияһында һәм 602 ваҡиға булған Хванхэ провинцияһында был ауырыу айырыуса ныҡ таралды. Был провинциялар, Америка оккупанттарынан башҡаларға ҡарағанда, һуңлабыраҡ азат ителгәйнеләр. Америка оккупацияһына дусар ителмәгән райондарҙа сәсәк ауырыуы менән сирләү ваҡиғалары булманы. Шулай уҡ Халыҡ армияһының хәрби хеҙмәткәрҙәре һәм Ҡытай добровольцтарының частәре араһында ла сәсәк ауырыуы менән сирләүҙең бер генә ваҡиғаһы ла булманы. Улар үҙ ваҡытында күрелгән саралар арҡаһында сәсәк ауырыуы эпидемияһынан һаҡлап алып ҡалырылдылар. Японнан алынған хәбәрҙәргә ҡарағанда, унда ғинуар аҙағында шулай уҡ Американың Кореялағы интервенттәре тарафынан индерелгән сәсәк ауырыуы менән сирләүҙең күп кенә ваҡиғалары билдәләнеү факты ла сәсәк ауырыуы менән йоғошландырыу сығанағын күрһәтә.

Бактериологик ҡоралды ҡулланыу АҠШ идара итеүсе түрәләренең агрессив авантюристик политикаһының бөлгөнлөккә төшөүе тураһында һөйләй. Бактериологик ҡоралды ҡулланып, агрессорҙар Корея халҡының көсөн ҡаҡшатыуға иҫәп тоттолар. Ләкин бында ла, башҡа эштәрҙәге кеүек үк, интервенттәр бик ныҡ яңылыштылар. Һуғыштың енәйәтсел методтары азатлыҡ һөйөүсе Корея халҡын ҡурҡыта алмаҫтар һәм Америка интервенттәрен ҡотолғоһоҙ еңелеүҙән ҡотҡара алмаҫтар.

Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының хөкүмәте Американың Кореялағы интервенттәренең һуғышты алып барыуҙың халыҡ-ара танылған нормаларын ҡот осҡос боҙоу һәм кешелеккә ҡаршы иң ауыр енәйәт булып торған яңы йыртҡыслығы бөтә донъя общественносының ҡаты ғәйепләүенә осрар, тип ышана. Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының хөкүмәте Макартурҙы, Риджуэйҙе һәм Американың Кореялағы интервенцияһының тыныс Корея халҡына ҡаршы бактериологик ҡоралды ҡулланыуҙа ғәйепле булған башҡа етәкселәрен арескә алыуҙы һәм судҡа биреүҙе талап итә.

Пак Хен Ен, Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының сит ил эштәре министры.

Пхеньян ҡалаһы, 8 май, 1951 йыл.

Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһы эшенең тамамланыуы

КОПЕНГАГЕН, 8 май. (ТАСС). Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһы үҙенең эшен тамамланы. Эш тамамланғандан һуң Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советының күп кенә члендәре провинция ҡалаларына киттеләр. Улар унда тыныслыҡты яҡлаусыларҙың митингыларында сығыш яһаясаҡтар.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 8 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының 8 майҙағы ултырышында Великобритания вәкиле Дэвис председателлек итте.

Беренсе һүҙҙе АҠШ вәкиле Джессеп алды. Ул көнбайыштағы өс державаның позицияһын яҡлауҙы дауам иттерҙе. Джессеп, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индереү менән өс держава делегацияһы ризалаша алмай, тип тағы ла бер тапҡыр белдерҙе.

Джессептең сығышы дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне индергән көн тәртибе буйынса көнбайыш державаларҙың килешеүгә өлгәшергә теләмәүен күрһәтте.

Джессепкә яуап биреп, СССР вәкиле Громыко былай тине:

— Джессеп белдереүендә совет делегацияһының яуабын йәки махсус аңлатмаларын талап итеүсе ниндәй ҙә булһа элементтар юҡ. Уның позицияһы билдәле. Үҙенән-үҙе билдәле, совет делегацияһы беҙ осраған тура килгән ҡаршылыҡтарҙың асылы буйынса сығыш яһау кәрәк булғанда ваҡығала өҫтәмә белдереү яһау хоҡуҡын үҙендә ҡалдыра.

Унан һуң, председателлек итеүсе Дэвис ултырышты ябырға тәҡдим итте.

Киләһе ултырыш 9 майҙа буласаҡ.

* * *

ПАРИЖ, 9 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 9 майҙа СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары 47-се ултырышҡа йыйналдылар. СССР вәкиле А. Громыко председателлек итте.

Көнбайыштағы өс держава вәкилдәренең береһе лә һүҙ алырға теләмәне. СССР вәкиле Громыко киләһе ултырышта сығыш яһау хоҡуҡын үҙендә ҡалдырыуын белдерҙе.

Шуның менән ултырыш ябылды.

Америка ғәскәрҙәре Исландияны оккупациялаһылар

ВАШИНГТОН, 8 май. АҠШ государство департаменты 1951 йылдың 5 майында Исландияның сит ил эштәре министры Бенедиктссондың һәм АҠШ-тың Исландиялағы посланнигы Лоусондың килешеүгә ҡул ҡуйыуҙары тураһындағы официаль белдереүҙе матбуғатҡа иғлан итеү өсөн тапшырған. Был килешеү Американың ҡоралы көстәренә Исландиялағы хәрби базаларҙы файҙаланырға рөхсәт итә. Белдереүҙә, йәнәһе «Исландия хөкүмәтенең үтенесе буйынса» АҠШ Исландияла Америка ғәскәрҙәре контингентын урынлаштырыу хоҡуҡын алды, тип әйтелә.

АҠШ-тың государство департаменты шулай уҡ АҠШ менән Исландия араһында 1951 йылдың 5 майында ҡул ҡуйылған килешеүҙең текстын да иғлан иткән.

КОПЕНГАГЕН, 8 май. (ТАСС). 8 майҙа бында АҠШ менән Исландия араһында 1951 йылдың 5 майындағы договорға ярашлы рәүештә Исландияның башҡалаһынан 50 километрға урынлашҡан Кефлавик аэродромына 7 майҙа Америка ғәскәрҙәренең хәрби һауа көстәренең 200 һалдатынан һәм офицеренән торған беренсе контингентының килеүе беленде.

«Ланд ог фольк» газетаһы Исландияға Америка ғәскәрҙәренең килеүенә аңлатма биреп, былай тип яҙа: «Америка ғәскәрҙәре Исландияны яңынан оккупациялаһылар. Кефлавик аэродромына Американың хәрби һауа көстәренең 200 һалдатын һәм офицерен төшөрөп, АҠШ Исландияны яңынан оккупациялауға беренсе аҙым яһаны. Ғәскәрҙәр «Исландия хөкүмәте менән булған договорға» ярашлы рәүештә килделәр.

Газета, был «договор» альтингтең (Исландия парламенты — ред.) ҡатнашлығынан башҡа төҙөлдө, сөнки «хөкүмәт Атлантик-пактты яҡлаусы альтинг депутаттарынан, общественностән йәшерен рәүештә ризалыҡ алды», тип билдәләй.

Газета унан ары Рейкьявиктағы «Тиодвильини» газетаһының мәҡәләһенә һылтана, был мәҡәләгә ярашлы рәүештә американдар, Кефлавик аэродромынан тыш, шулай уҡ Вальфердур базаһын да, моғайын, Скеряфердур базаһын да басҡаҡтар, шулай уҡ май аҙағына Исландияға 3—4 мең американ һалдаты һәм офицерҙың килеүе көтөлә.

КОПЕНГАГЕН, 8 май. (ТАСС). «Б.» газетаһы, Ассошиэйтед Пресс агентлығының хәбәренә һылтанып, 8 майҙа Американың Исландияға төшөрөлгән беренсе ғәскәрҙәре ҡоралы көстәрҙең бөтә эшкәрләрҙән 280 кешене тәшкил итәләр, тип хәбәр итә. Төп көстәр бер нисә тиҙҙән һуңлабыраҡ, моғайын, бер нисә аҙна эсендә киләсәктәр.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 9 май. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһының 9 майҙа тапшырылған белдереүендә, Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, бөтә фронтта актив һуғыш хәрәкәттәре алып бара, тип әйтелә. Фронттың көнбайыш һәм көнсығыш участкаларында төньяҡҡа алға барырға маташыусы дошмандың атакалары кире ҡағылды.

ХРОНИКА

СССР Верховный Советы Президиумы иптәш Д. В. Павловты, уның икенсе яуаплы эшкә билдәләнеүе айҡанлы, СССР аҙыҡ промышленносы Министры вазифаһынан бушатты.

СССР Верховный Советы Президиумы иптәш И. К. Сиволаповты СССР аҙыҡ промышленносы Министры итеп билдәләне.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

ТЕАТР

„ИЗГЕ ТЕЛӘКЛЕ КЕШЕЛӘР“

(Г. Мдивани әҫәре, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы А. Мөбәрәков постановкаһы)

Тыныслыҡ өсөн көрәш яңы фазаға, хәл иткес фазаға күсте. Һуңғы йыл һуғыш ҡурҡынысының реаль факторға әйләнеүе, ә уға ҡаршы ҙәһшәтле көс булып, тыныслыҡ лагеренең үҫә һәм нығый барыуы менән характерлы. Был йыл донъяның бик күп ғәмһеҙ кешеләрҙең аңында ҡырҡа боролош яһаны. Әгәр агрессорҙарға һуғыш утын тоҡандырыуға юл ҡуйылһа, ул һуғыш ике донъя араһында туп-тура юл менән генә йөрөмәйәсәк, ул һәр бер балаҡас илгә, һәр бер өйгә инәсәк, һәр бер кешенең тормошон емереп үтәсәк. Ер шарына ут һалырға үрелгән яуызын ҡулындағы ҡиҫәүҙе бәреп төшөрөп, тапап ташларға кәрәк, юҡһа пожар ҡалыҡһа, һүндереү еңел булмаясаҡ. Донъя халыҡтары быны ошо дәрәжәлә торған һайын тәрәнерәк аңлай баралар.

Ошо арала ғына Башҡорт государство академия театры беҙҙең заманың был иң мөһим темаһына — тыныслыҡ өсөн көрәшкә арналған «Изге теләкле кешеләр» тигән яңы спектакль күрһәтте. Был ҡыйынлы теманы художестволы хәл итеү өсөн театр коллективы ҙур көс ҡуйған.

Ваҡиға һуңғы йылдарҙа, бәләкәй илдәрҙең береһендә бара. Спектаклдә беҙҙең илебеҙ сиктәренән тышта изге теләкле кешеләрҙең тыныслыҡ өсөн көрәше, ундағы ҡаршылыҡтар, донъяның именлеге өсөн үҙҙәрен яуаплы һанаған ғәмһеҙ кешеләрҙең һәләкәте көүҙәләнә. Әҫәрҙә былдарҙың бөтәһе бер семьяның — оло юл өҫтөндә юлаусылар йорто тотоусы Габу семьяһының яҙмышы аша күрһәтелә. Ваҡ буржуаның: «Минең өйөм — минең крепосем», — тигән ҡағиҙәһе буйынса йәшәүсе Габу, әлбиттә, һуғышҡа ҡаршы, ләкин ул тыныслыҡ өсөн көрәшкә лә ҡатнашмай, йәнәһе, политиканан ситтә тора. Ул Стокгольм Воззваниеһы аҫтына ла ҡул ҡуймай һәм үҙенең улына ла рөхсәт бирмәй. Габу, политикаға ҡатнашып, полицияның шелтәһенә эләгеүҙән ҡурҡа. Ләкин ваҡыт үтеү менән һәләкәт үҙе — һуғыш Габуҙың өйөнә килеп инә. Һәм шунан ғына ул әнеһе Чорҙенсе, улы Болдын, ҡарт уҡытыусының хаҡ эш эшләүҙәрен аңлай. Әгәр Чорҙелар сафында ул һәм уның кеүек миллиондарса бүтәндәр актив көрәшкән булһа, бәлки, һуғыш һәләкәте бөтөрөлгән булыр ине.

Габу — ҡатмарлы һәм тормошсан образ. РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Ғ. Карамышев башҡарыуында ул үҙенең тәрән психологик кисерештәре, драматизмы менән тамашасыла тәрән тәьҫир ҡалдырҙы. Һүҙ артист эшенә ҡағылғас, шуны ла әйтергә кәрәк. Ғ. Карамышев ҡай саҡ саманан сығып китеү арҡаһында, Габуҙың кисерештәренең тәрәнлеген биреү урынына истерика тоныны күсә. Ҙур артистең тышҡы тауыш эффекты менән мауығыуы ул тыуҙырған образдың тормошсанлығына зарар килтерә. Ошо уҡ истерикалылыҡ урыны менән Кама ролен башҡарыусы артистка К. Ихсанова уйынына ла күсә.

Үткән һуғышта немец концлагерҙарын татыған Чорде образында спектаклдең төүге өлөшөндә прогрессив көрәшсенең гүзәл һыҙаттары сағыла. Был ролде башҡарыусы артист Хөсәйн Ҡудашев үҙенең актер оҫталығының артабан үҫә барыуын күрһәтте. Ләкин ваҡиғаларҙың үҙәгендә торорға тейеш булған Чорде спектаклдең икенсе яртыһында бөтөнләй күренмәй. Был, әлбиттә, пьесаның авторы Г. Мдиваниҙең ҙур етешһеҙлеге.

Тыныслыҡ өсөн көрәштә актив ҡатнашыусы ҡарт уҡытыусы (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Ғ. Туҡаев), Бан (артист Х. Усманов), Налв (артистка Ф. Камалетдинова) образдары хәтерҙә ныҡ ҡалалар.

Спектаклдә шулай уҡ дошман лагеры— һуғыш уты тоҡандырыусыларҙың һәм уларҙың ялсыларының яуызлыҡтары фаш ителә. Бында Америка сенаторы Браун (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Р. Сыртланов), Марионетка хөкүмәттең эске эштәр министры Квак (РСФСР-ҙың халыҡ артисы Ә. Зәбиров), Америка генералы Джон Артур (артист С. Ҡунаҡбаев) БМО-ның вәкиле һатлыҡ йән Питер Лувен (артист Р. Әюпов), полиция инспекторы (артист З. Иғҙәүләтов) үҙҙәренең ерәнгес эштәре менән күҙ алдына килеп баҫалар.

Спектаклдәге үҙенсәлекле һәм ҡатмарлы Хейг образы тураһында айырым әйтеп китке килә. Артист Г. Арысланов башҡарыуында рядовой американец Хейгтең аны аҡрынлап яҡтыра барыуын тамашасы әҙмә-әҙ күреп килә. Хейг — һалдат, ул Америка агрессияһының ҡоралы, ләкин был ҡоралдың агрессорҙар белмәгән бер сифаты бар. Ул үҙенең бөтә нәфрәтле көсөн хужаларына ҡаршы юнәлтергә лә һәләтле.

«Изге теләкле кешеләр» спектаклен күрһәтеп, театр кәрәкле һәм ҙур эш эшләне. Беҙҙең искусствобыҙ заманың иң төп мәсьәләләрен күтәрә һәм уны художество саралары менән халыҡ массаларына еткерә. «Изге теләкле кешеләр» спектакле беҙҙең тыныслыҡ өсөн көрәшебеҙҙә үҙенең мөһим эшен эшләйәсәк.

Режиссер эшенә ҡарата берҙән-бер, ләкин, минеңсә, бик мөһим бер замечание яһарға кәрәк. Спектаклдә тыныслыҡ өсөн көрәшселәрҙең хәрәкәттәрендә сабалаһеү, ығы-зығы, саманан тыш юғары нотаға күсеү күп. Изге эш өсөн көрәшселәр һалҡын ҡанлы, тотанаҡлы һәм ҙур рухани көскә эйә булырға тейештәр. Тамашасыға быны шуны күрһәтергә кәрәк.

М. Кәрим.

1951 йылдың 30 майында Ереван ҡалаһында ГОСУДАРСТВОНЫҢ 3 ПРОЦЕНТЛЕ ЭСКЕ ОТОШЛО ЗАЕМЫ отоштарының 21-се тиражы буласаҡ

Тиражда отоштарҙың түбәндәге һаны уйналасаҡ:

Отош күләме һумдарҙа	Отоштар һаны: заемдың бер разрядына	Отоштар һаны: заемдың өс разрядына
50.000	2	6
25.000	5	15
10.000	25	75
5.000	80	240
1.000	700	2100
400	7688	23064
Бөтәһе . . .	8500	25500
Отоштарҙың дөйөм суммаһы һумдарҙа .	4.650.200	13.950.600

Заем буйынса йыл һайын отоштарҙың 6 тиражы үткәрелә—30 ғинуарҙа, 30 мартта, 30 майҙа, 30 июлдә, 30 сентябрҙә, 30 ноябрҙә һәм отоштарҙың бер өҫтәмә тиражы—30 сентябрҙә.

Төп тираждарҙа сыҡҡан отоштар, облигацияларҙың ҡасан алыныуына ҡарамаҫтан, түләнәләр. Өҫтәмә тираждарҙа сыҡҡан отоштар облигациялар өҫтәмә тираж булғанға тиклем кәм тигәндә 9 ай элек алынған шарттарҙа ғына түләнәләр.

Заем облигациялары һаҡлыҡ кассалары тарафынан һатылалар һәм һатып алыналар.

Государствоның 3 процентле эске отошло заемының облигацияларын һатып алығыҙ!

Государство заемдары СССР халыҡ хужалығын артабан үҫтереүгә булышлыҡ итәләр.

Башҡорт АССР-ы государство хеҙмәт һаҡлыҡ кассаһы һәм госкредит Управлениеһы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

ПО 2475 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25,000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

1951 йыл № 92 (8809) 12 МАЙ шәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Сталино ҡалаһының Сталин исемендәге металлургия заводының эшселәренән, эшсе ҡатын-ҡыҙҙарынан, инженерҙарынан, техниктарынан һәм хеҙмәткәрҙәренән иптәш Сталинға хат (1-се бит).
И. В. Сталин Әҫәрҙәренең ун өсөнсө томы (1-се бит).
Зианчура районы йылҡысылыҡ үҫтереүҙең ике йыллыҡ планын арттырып үтәне (1-се бит).
Яңы заемдың уңышы (1-се бит).
ЯҘҒЫ БАСЫУ ЭШТӘРЕН УҢЫШЛЫ ТАМАМЛАЙЫҠ, ТОТОШ МАЙҘАНДАРҘА ЮҒАРЫ УРОЖАЙ ҮҪТЕРЕП АЛАЙЫҠ! (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ш. Сәлимйәнов. — Колхоз партия ойошмалары секретарҙары эште яҡшыртырға (2-се бит).
Ф. Зәйнетов. — Комсомолецтар — партия ойошмаһының боевой ярҙамсылары (2-се бит).
И. Нигмәтуллин. — Стена газеталары күргәҙмәһендә (2-се бит).
РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР. (2-се бит).
МЕДИЦИНА РАБОТНИКТӘРЕ! ХАЛЫҠТЫ МЕДИЦИНА ЯҒЫНАН ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮҘЕҢ СИФАТЫН АРТАБАН ЯҠШЫРТЫУ ӨСӨН КӨРӘШЕГЕҘ!
Е. Соболев. — Юғары наградаһы аҡлау өсөн (3-сө бит).
И. Гиллерман. — Сталинсе хәстәрлек (3-сө бит).
Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә А. А. Громыко белдереүе (3—4-се биттәр).

ВКП(б) райкомдарының лекторийҙәре

Беҙҙең партиябыҙ марксизм-ленинизм идеяларын пропагандалау буйынса ҙур эш алып бара, шуның менән хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләү бурысын уңышлы хәл итә. Героик большевиктәр партияһының данлыҡлы тарихе, Ленин менән Сталиндең гениаль идеялары илебеҙҙең халҡын коммунизм өсөн фиҙакәр көрәшкә рухландыра. Совет кешеләре, үҙҙәренең марксистик-ленинсе белем кимәлдәрен күтәрә барып, юғары идеялылыҡҡа һәм принципиаллелеккә, эштәге етешһеҙлектәрҙе һәм хаталарҙы ҡыйыу тәнҡиткә һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитте киң йәйелдереүгә, аңлылыҡты, алдынғылыҡты, прогрессивлекте бөтә яҡтан яҡлауға һәм үҫтереүгә өйрәнәләр.

Беҙҙең кадрҙарыбыҙҙы артабан марксистик-ленинсе тәрбиәләү, хеҙмәтсәндәрҙең социалистик аңлылығын өҙлөкһөҙ күтәреү — коммунистик төҙөлештең бөтә участкаларында яңынан-яңы еңеүҙәрҙең гарантияһы ул. Бына шуның өсөн дә кадрҙарға марксистик-ленинсе тәрбиә биреү һәр ваҡыт беҙҙең партия ойошмаларыбыҙҙың иғтибар үҙәгендә тора.

Республикабыҙҙың партия ойошмалары ВКП(б) тарихен һәм теорияһын үҙ аллы өйрәнеүселәргә ярҙамды көсәйтеү буйынса күп кенә саралар күрҙеләр. Өлкә партия активы йыйылышының республикала идеологик эштең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһындағы ҡарарын үтәй барып, ВКП(б)-ның район комитеттәре коммунистарҙың уҡыуҙары менән тәрәнерәк шөғөлләнә башланылар, индивидуаль пландарҙың үтәлеүенә контроль көсәйтелде. Консультанттарҙың эшен яҡшыртыу буйынса байтаҡ эш башҡарылды. Күп кенә партия ойошмаларында семинарҙар һәм теоретик беседалар үткәрелә, уларҙа үҙ аллы уҡыусылар тарафынан әҙерләнгән рефераттар, доклад тикшерелә. Индивидуаль консультацияларҙың сифаты һәм идея-теоретик кимәле күтәрелде.

Большевиктәр партияһының теорияһын һәм тарихен үҙ аллы өйрәнеүселәргә ярҙамға лекциялар циклы уҡыуҙы ойоштороу мөһим урын тота. Ағымдағы уҡыу йылында ВКП(б) райкомдары эргәһендәге лекторийҙәрҙең эше һиҙелерлек яҡшырҙы, лекцияларҙың тематикаһы киңәйҙе һәм уларҙың сифаты яҡшырҙы. ВКП(б) тарихе, диалектик һәм тарихи материализм һәм политик экономия буйынса лекциялар уҡыла. Лекцион пропаганда эшенә партия, совет активы һәм политик яҡтан алдынғы интеллигенция йәлеп ителә.

Партияның Бөрө район комитеты эргәһендә партия тарихе, диалектик һәм тарихи материализм, политик экономия буйынса өс лекторий эшләй. Уларҙың эше план буйынса алып барыла. Лекцияларҙы уҡыуҙа уҡытыусылар институтының преподавателдәре, район комитетының етәксе работниктәре ҡатнаша. Лекторҙар колхоз партия ойошмаларында ла сығыш яһайҙар. ВКП(б)-ның Бөрйән, Балтас, Мишкә райкомдары эргәһендәге лекторийҙәр ҙә матур ғына эшләп киләләр.

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылы тамамланып килә. Был көндәрҙә лекторийҙәрҙең эшен айырыуса йәнләндереү талап ителә. Марксизм-ленинизм классиктәренең әҫәрҙәре, диалектик һәм тарихи материализм, политик экономия, СССР-ҙың тышҡы политикаһы һәм халҡ-ара хәл мәсьәләләре буйынса күберәк лекциялар уҡыуҙы ойошторорға кәрәк. Партияның район комитеттәре, уларҙың пропаганда һәм агитация бүлектәре был мөһим эшкә серьез иғтибар бирергә бурыслылар.

Тәжрибәле лектор тарафынан уҡылған йөкмәткеле, юғары идея-теоретик кимәлдәге лекция үҙ аллы уҡыусыларҙың марксизм-ленинизм идеяларын тәрән үҙләштереүҙәренә ярҙам итә, ҡатмарлы теоретик мәсьәләләрҙе аңлауҙы еңеләйтерә, китап өҫтөндә серьез эшләүгә дәртләндерә. Шуға күрә лекторийҙәрҙең эше яҡшы ойошторолған райондарҙа коммунистарҙың уҡыуҙары уңышлы бара.

Ләкин республикабыҙҙа партияның ҡайһы бер район комитеттәре лекцион пропаганданы баһалап еткермәйҙәр, лекторийҙәрҙең эшенә тейешле иғтибарҙы бирмәйҙәр әле.

Мәҫәлән, Аҫҡын районында даими эшләүсе семинар ойошторолмаған. Лекциялар планһыҙ һәм онотҡанда бер генә үткәрелә, уларҙы уҡыуҙа система һәм эҙмә-эҙлелек юҡ. ВКП(б)-ның Бозаяз райкомы эргәһендә лекторий формаль рәүештә генә төҙөлгән. Лекторҙарҙың һәм тыңлаусыларҙың даими составы булдырылмаған. Сифатһыҙ лекциялар уҡыуға юл ҡуйыла, шуға күрә, ул лекцияларҙы тыңларға йөрөүселәр аҙ.

Белоҡатай районында айҙар буйына лекциялар үткәрелмәй. Үҙ аллына уҡыусыларға ярҙам ойошторолмаған.

Лекторийҙәргә тейешле иғтибар бирелмәгәнлектән күп урында уҡылған лекциялар политик белемдәрен күтәреү өҫтөндә үҙ аллына эшләүсе коммунистарҙың һәм партияһыҙ интеллигенцияның төрлө группаларының үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндермәйҙәр.

ВКП(б)-ның район комитеттәре лекторий членарының үҙҙәренә лә тейешле ярҙамды күрһәтмәйҙәр. Лекторҙарҙың семинарҙары үткәрелмәй, лекцияларҙың сифатына контроль булдырылмаған, уларҙың текстары алдан уҡып тикшерелмәй. Алдынғы лекторҙарҙың тәжрибәһе дөйөмләштерелмәй. Бына быларҙың бөтәһе лә лекторийҙәрҙең эшендә ҙур етешһеҙлектәргә килтерә.

Был етешһеҙлектәрҙең сәбәбе шунда: райкомдарҙың пропаганда һәм агитация бүлектәре партия пропагандаһының был мөһим формаһына етәкселек итмәйҙәр, ә райком секретарҙәре һәм бюро членары уларға тейешле йүнәлеш бирмәйҙәр. Был етешһеҙлектәр бөтөрөлөргә тейеш.

Һуңғы йылдарҙа партия ойошмаларында ла серьез үҙгәрештәр барлыҡҡа килде. ВКП(б) Үҙәк Комитетының идеологик мәсьәләләргә серьез иғтибар биреүе һәм партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙың берҙәм һәм төҙөк бер системаһы индерелеүе һөҙөмтәһендә һуңғы йылдарҙа коммунистарҙың политик кимәле күтәрелде, марксистик-ленинсе теорияны үҙ аллына өйрәнеүселәр һаны артты.

Үткән уҡыу йылында республика партия ойошмаһында 15 мең самаһы коммунист үҙ аллына уҡыһа, быйыл инде уларҙың һаны 21 меңдән артыҡ. Билдәле, улар партия ойошмаларының серьез ярҙамына мохтаж. Был ярҙамды ойоштороуҙа лекцион пропаганда бик мөһим средство булып тора.

ВКП(б) район комитеттәре лекторийҙәрҙең эшенә иғтибарҙы көсәйтергә, лекцияларҙың тематикаһын киңәйтергә һәм сифатын яҡшыртырға, марксизм-ленинизмды пропагандалауҙа уларҙың ролен күтәрергә бурыслылар. Лекторҙарҙың идея-теоретик кимәлен күтәреү тураһында даими хәстәрлек күрергә, лекцияларҙың сифатына систематик контроль булдырырға кәрәк.

Лекторийҙәрҙең эшен йәйелдереү һәм лекторҙар коллективына ярҙамды көсәйтеү лекцион пропаганда өлкәһендәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә мөмкинлек бирәсәк. Ә был иһә марксистик-ленинсе теорияны үҙ аллына өйрәнеүселәрҙең уҡыу сифаттарын күтәреүҙә бик мөһим шарт булып тора.

Сталино ҡалаһының Сталин исемендәге металлургия заводының эшселәренән, эшсе ҡатын-ҡыҙҙарынан, инженерҙәренән, техниктәренән һәм хеҙмәткәрҙәренән

иптәш СТАЛИНГӘ хат

Донбасстағы Сталино ҡалаһының Сталин исемендәге металлургия заводы работниктәренең коллективы ССР Союзы Министрҙар Советы Председателе иптәш Иосиф Виссарионович Сталинға ебәргән хаттарында былай тип яҙалар:

«Беҙ, Көньяҡтағы иң боронғо металлургия заводының металлургтары, социалистик ярышҡа ҡушылыу тураһында Магнитогорск металлургия комбинаты металлургтарының тәҡдимен ҡайнар яҡлайбыҙ һәм түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ: 1951 йылғы планды срогынан алда үтәргә, һәм пландан тыш 18 мең тонна суйын, 6 мең тонна ҡорос, 12 мең тонна прокат һәм 5 миллион һум экономия бирергә, 6 мең квадрат метр торлаҡ майҙанын эксплуатацияға тапшырырға.

ЗИАНЧУРА РАЙОНЫ ЙЫЛҠЫСЫЛЫҠ ҮҪТЕРЕҮҘЕҢ ИКЕ ЙЫЛЛЫҠ ПЛАНЫН АРТТЫРЫП ҮТӘНЕ

[illegible] (Телеграф аша). Райондың малсылары, ауыл хужалығы специалистары, социалистик ярышҡа ҡушылып, йылҡысылыҡ үҫтереүҙең ике йыллыҡ планын срогынан алда арттырып үтәргә йөкләмә алғайнылар. Улар үҙ һүҙҙәренә тоғро булдылар. Район 8 майға йылҡысылыҡ үҫтереүҙең ике йыллыҡ планын 101 процентҡа үтәне.

Райондың колхозсылары һәм ауыл хужалығы специалистары был уңыштарҙы артабан нығытыу, малдар өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн социалистик ярышты артабан дауам иттерәләр.

ВКП(б)-ның Зианчура райкомы секретары М. Әхмәдиев.
Район Советы исполкомы председателе Н. Латыпов.

ЯҘҒЫ БАСЫУ ЭШТӘРЕН УҢЫШЛЫ ТАМАМЛАЙЫҠ, ТОТОШ МАЙҘАНДАРҘА ЮҒАРЫ УРОЖАЙ ҮҪТЕРЕП АЛАЙЫҠ!

ТРАКТОРИСТӘР ЯРЫШЫ

Ауырғазы районы Каганович исемендәге колхозды Шлаплы МТС-ының иптәш Михайлов етәкселек иткән трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Был бригаданың членары машиналарҙы нисек файҙаланырға кәрәклеген өйрәнеп күрһәтәләр. Тракторист иптәш Ҡотлозаман Батыршин СТЗ-НАТИ тракторы менән смена һайын 60—85 гектар ашлыҡ сәсте. Трактористка Мәрйәм Назарова ла сменаға 8-10 гектарҙан да кәм ер һөрмәй. Прицепщиктарҙан Сәмәрә Моратова, Миңниса Рәхмәтуллина, Тайфа Зәлилова иптәштәр ҙә бик тырышып эшләнеләр.

Һөҙөмтәлә был бригада МТС буйынса социалистик ярышта беренсе урынды яулап алды. Трактористарҙың тырыш хеҙмәт күрһәтеүҙәре һөҙөмтәһендә Каганович исемендәге колхоз сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп тамамлауға өлгәште.

Ғ. Ибраков.

Сәсеү планы арттырып үтәлде

Ҡандра. Ленин исемендәге эреләтелгән ауыл хужалығы артеле членары 1547 гектар майҙанда иртә культуралар сәсеү планын ҡыҫҡа срокта тамамланылар. Быйыл бойҙай 285 гектарға күберәк сәселде.

Эш социалистик ярыш менән алып барылды. Сәнәғәтуллин, Ғабдуллин, Ғәлимов һәм Кәлимуллин иптәштәр трактор сәскесендә тәүлек әйләнәһенә эшләп, көндәлек нормаларын 220—250 процентҡа үтәнеләр. Хәниф Латыпов бабай орлоҡ ташыуҙа яҡшы эшләне.

Колхозда 21 гектар майҙанда ағас ултыртылды, 18 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ремонтланды, шулай уҡ 100 гектарҙан артыҡ болонлоҡ таҙартылды.

С. Сәетгәрәев.

Механизаторҙарҙың өлгөлө эштәре

Пәркәй МТС-ының иптәш Ғабдулла Таһиров етәкселек иткән трактор бригадаһы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеев башланғысына ҡушылып, баҫыу эштәрендә уңышлы эшләй. Ул үҙе хеҙмәтләндергән Ворошилов исемендәге колхозда иртә культуралар сәсеүҙе май башына уҡ тамамланы. Бөтәһе 600 гектар ашлыҡ сәселде, 106 гектар ужым һәм 490 гектар туңға һөрөлгән ер тырматылды, 400 гектар майҙан культивацияланды. Хәҙер бригада пар ере һөрә. Трактористарҙан Минһажев һәм Закирьянов иптәштәр көндәлек норманы арттырып үтәйҙәр.

С. Афзалов.

Башҡорт АССР-ы колхоздарында яҙғы баҫыу эштәре барышы*)

(План үтәлешө, 1951 йылдың 10 майына, процентторҙа)

Райондар	Ашлыҡ сәскән	Аҡыс утыртылған	Ужым тырматылған	Бөтә төр мал аҙығы культуралары сәскән	Райондар	Ашлыҡ сәскән	Аҡыс утыртылған	Ужым тырматылған	Бөтә төр мал аҙығы культуралары сәскән
Хәйбулла	104	58	79	75	Ауырғазы	74,8	61	78	56
Баймаҡ	101	48	42	37	Бәләбәй	74,7	38	51	57
Өбйәлил	95,9	71	89	65	Воскресен	73,0	72	63	34
Матрай	93,2	47	75	53	Көйөргәҙе	73,0	60	76	40
Абзан	90,1	77	69	44	Салауат	73,0	—	46	36
Йомағужа	89,4	70	93	111	Бөрйән	73,0	—	27	5
Зианчура	87,8	71	93	62	Ҡыйғы	71,7	—	45	37
Буздәк	87,0	70	81	72	Бишбүләк	71,6	70	52	61
Стәрлетамаҡ	86,7	72	14	43	Федоровка	71,4	87	84	38
Күгәрсен	85,0	72	99	39	Ҡалтасы	70,3	100	79	61
Дәүләкән	84,9	49	97	83	Малаяз	70,3	57	100	47
Учалы	84,5	72	89	50	Борай	70,1	89	60	32
Благовар	82,7	57	53	78	Баҡалы	70,0	76	74	78
Ҡандра	82,6	90	87	70	Ҡырмыҫҡалы	69,8	82	74	47
Шишмә	82,3	62	98	79	Йылайыр	68,7	—	21	5
Стәрлебаш	82,2	100	103	46	Нуриман	68,2	—	42	56
Миәкә	82,1	67	79	54	Архангель	67,7	—	68	57
Белорет	81,8	—	9	22	Бозаяз	66,8	92	65	43
Балтас	81,7	88	56	44	Мишкә	66,3	86	44	20
Туймазы	81,0	101	101	104	Покровка	63,7	—	75	38
Әлшәй	80,7	56	120	70	Күшнаренко	62,9	68	46	24
Маҡар	80,6	—	77	60	Аҫҡын	62,7	—	70	48
Шаран	78,7	100	94	70	Иглин	60,4	100	68	37
Саҡмағош	77,8	102	76	53	Бәйкибаш	59,6	—	59	50
Янауыл	77,0	89	106	48	Бөрө	59,0	90	84	30
Тәтешле	76,9	—	49	63	Благовещен	56,8	113	58	42
Өфө	76,8	85	96	76	Краснокама	55,4	96	56	28
Дүртөйлө	76,8	88	108	39	Белоҡатай	54,3	—	43	17
Иләш	76,3	75	75	45	Ҡариҙел	51,8	—	31	29
Ғафури	76,2	52	33	39	Дыуан	51,0	—	55	30
Йәрмәкәй	76,0	76	80	69	Оло Теләк	48,3	—	14	55
					Мәсетле	47,8	—	68	28
					Октябрьский ҡалаһы	75,3	—	—	164

*) Райондарҙың тотҡан урыны сәсеү барышына ҡарап билдәләнгән.

* * *

Ошо йылдың 10 майына республикабыҙҙың 35 районы иртә культуралар сәсеү планын үтәнеләр һәм арттырып үтәнеләр. Шул уҡ ваҡытта Мәсетле, Ҡариҙел, Белоҡатай, Ҡыйғы һәм Оло Теләк райондары сәсеү планын үтәүҙә бик артта ҡалдылар, май айының икенсе биш көнлөгөндә баҫыу эштәренең темпын түбәнәйттеләр.

Күп кенә райондар ҡиммәтле аҙыҡ культураһы булған — борсаҡ сәсеүҙе оҙаҡҡа һуҙҙылар. Бигерәк тә Көйөргәҙе, Благовещен, Краснокам, Саҡмағош, Ҡариҙел, Белоҡатай һәм Иглин райондары артта ҡалалар.

Республикабыҙҙа мал аҙығы культуралары сәсеүҙә булған артта ҡалыу әле булһа бөтөрөлгәне юҡ. Белоҡатай, Учалы, Мишкә, Кушнаренко, Краснокам, Бөрө һәм башҡа күп кенә райондар был культураларҙы сәсеүҙе әле булһа өҙәләр.

Майлы культуралар сәсеү планын бары тик Буздәк һәм Туймазы райондары ғына үтәне. Ә Салауат, Күгәрсен, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ һәм Шишмә райондары майлы культуралар сәсеү планын тиҙерәк үтәү өсөн мөмкинлектәрҙе файҙаланмайҙар.

Оҙон-етен һәм тарма сәсеүҙең иң яҡшы сроктары инде үтте. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был культураны сәсеү планын республиканың бер генә районы ла үтәгәне юҡ әле.

Республикабыҙҙың ун районында пар һөрөүгә башланылар. Ләкин шуны әйтергә кәрәк, был эш күпселек райондарҙа сиктән тыш насар ойошторолған.

Иртә культуралар сәсеүҙе һуҙыуға артабан юл ҡуйыу мөмкин түгел. Һәр бер колхозда иртә культураларҙы сәсеүҙе тамамлау менән бер үк ваҡытта, һуңғы культураларҙы (ҡара бойҙайҙан башҡаһын) сәсеүҙе лә киң йәйелдерергә кәрәк.

ЯҢЫ ЗАЕМДЫҢ УҢЫШЫ

Республикабыҙҙың ҡалаларында һәм ауылдарында СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство заемы уңышлы урынлаштырылыуы тураһында урындарҙан күп мәғлүмәттәр килә.

Башҡортостандың ҡалалары араһынан заемды урынлаштырыу буйынса Ишембай ҡалаһы алдынғы сафта бара. Нефтселәр ҡалаһының эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре заемға берҙәм яҙылалар. Черниковск, Белорет, Өфө, Октябрьский ҡалаларында ла подписка уңышлы үтә. Республикабыҙҙың башҡалаһы Өфөлә заемға яҙылыуҙа бигерәк тә Дим, Ленин, Жданов райондары алдынғы урында баралар.

Колхоз ауылы эшсәндәре заемға яҙылған суммаларын срогынан алда индерәләр. Баймаҡ, Бөрйән, Бозаяз, Маҡар, Саҡмағош, Хәйбулла, Ҡырмыҫҡалы, Иләш, Шишмә, Бишбүләк, Дүртөйлө кеүек һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың хеҙмәтсәндәре подписка суммаларының байтаҡ өлөшөн аҡсалата индерҙеләр.

КОЛХОЗСЫЛАРҘЫҢ АКТИВЛЕГЕ

Бозаяз районының хеҙмәтсәндәре СССР халыҡ хужалығын артабан үҫтереүгә йүнәлдерелгән яңы заемға берҙәм яҙылдылар. «Правда» колхозы членары государство заемына бер көн эсендә яҙылып бөттөләр һәм шул көндә үк подписка суммаларының 80 процентын аҡсалата индерҙеләр.

Райондың эшселәре, хеҙмәткәрҙәре һәм интеллигенцияһы үҙ һаҡлыҡтарын государствоға ҙур шатлыҡ менән бирҙеләр. Бозаяз урта һәм башланғыс мәктәбе уҡытыусылары, райпотребсоюз коллективы алты айлыҡ эш хаҡтары күләмендә яҙылдылар.

Ш. Сәетов.

Тыныслыҡ эшен нығытыу өсөн

Шишмә. (Телефон аша). Район хеҙмәтсәндәре яңы заемға яҙылыуҙа ҙур патриотизм күрһәтәләр.

Ленин, Ворошилов, Карл Маркс исемендәге, «Правда», «Яңы тормош» колхоздарында заемға яҙылыу айырыуса ойошҡанлыҡ менән үтте.

Ленин исемендәге ауыл хужалығы артелендә яңы заем сығарылыуға арналған митингела 70 йәшлек Мансур бабай Әсәдуллин бөтә колхозсыларҙың тойғоларын белдереп, былай тине:

— Беҙ һуғыш теләмәйбеҙ, ә коммунизм төҙөйбеҙ. Беҙҙең государствоға үтескә биргән аҡсаларыбыҙ коммунизмдың бөйөк төҙөлештәрен тиҙләтер. Донъяла тыныслыҡ еңһен өсөн мин яңы заемға ҙур теләк менән яҙылам.

Колхозсылар Мансур бабайҙың тәҡдимен берҙәм яҡланылар һәм шунда уҡ заемға яҙылып бөттөләр.

Ш. Шәрәфетдинов.

И. В. СТАЛИН ӘҪӘРҘӘРЕНЕҢ УН ӨСӨНСӨ ТОМЫ

И. В. Сталин Әҫәрҙәренең ВКП(б) Үҙәк Комитеты эргәһендәге Маркс — Энгельс — Ленин институты тарафынан әҙерләнгән ун өсөнсө томы донъяға сыҡты.

И. В. Сталин Әҫәрҙәренең ун өсөнсө томы 1930 йылдың июленән 1934 йылдың ғинуарына тиклем ваҡыт эсендә яҙылған әҫәрҙәрҙән тора.

Был осорҙа большевиктәр партияһы, социализмдың бөтә фронт буйынса киңәйтелгән һөжүме политикаһын тормошҡа ашыра барып, илде социалистик үҙгәртеп ҡороу эшендә бөтә донъя күләмендә тарихи әһәмиәтле уңыштарға өлгәште. Советтар Союзы ҡеүәтле индустриаль державаға, механизациялаштырылған эре коллектив ауыл хужалығы иленә әйләнде.

«ВКП(б)-ның XVI съезында Үҙәк Комитеттың политик отчеты буйынса йомғаҡлау һүҙендә» иптәш Сталин уң оппортунистар лидерҙарының үҙҙәрен шулай йәҙлә итеп тотоуҙарын фаш итә. Социалистик төҙөлештең уңыштарын характерлап, И. В. Сталин, СССР социализм осорона инде, тип күрһәтте. И. В. Сталин социализм бөтә донъя масштабында еңгәндән һуң ғына милли телдәрҙең бер дөйөм телгә ҡушылыуҙары тураһындағы программа положениеһе нигеҙләне.

«Хужалыҡ работниктәренең бурыстары» һәм «Яңы обстановка — хужалыҡ төҙөлешенең яңы бурыстары» тигән телмәрҙәрендә И. В. Сталин социалистик индустриалаштырыуҙың йылдам темптарының тарихи кәрәклеген нигеҙләй, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарын реконструкциялау осоронда техниканың хәл иткес әһәмиәтен күрһәтә һәм: «Большевиктар техникаға эйә булырға тейештәр» тигән лозунгыны күтәрә. И. В. Сталин социалистик промышленносте үҫтереүҙең яңы шарттарын аса һәм хужалыҡ төҙөлештәренә етәкселектең яңы алымдарын билдәләй.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм Үҙәк Контроль Комиссияһының берләштерелгән пленумында һөйләгән «Беренсе биш йыллыҡтың йомғаҡтары» тураһындағы докладында И. В. Сталин беренсе биш йыллыҡ пландың дүрт йылда үтәлеүенең бик мөһим халыҡ-ара әһәмиәткә эйә булыуын күрһәтә.

Биш йыллыҡ йомғаҡтары айҡанлы партияның төп бурыстарын билдәләп, И. В. Сталин общественный социалистик милекте рвачтарҙан һәм ҡараҡтарҙан һаҡлауҙың айырыуса мөһимлеген һәм пролетариат диктатураһын һәр яҡлап нығытырға кәрәклеген күрһәтә.

«Ауылда эшләү тураһындағы телмәр» һәм «Колхозсы-ударниктәрҙең беренсе Бөтә Союз съезындағы телмәр» колхоз ҡоролошон нығытыу мәсьәләләренә, ауылда партия эшенең бурыстарына арналғандар. Колхоз ҡоролошона йомғаҡ яһап, И. В. Сталин «Колхоздарҙы большевистик, ә колхозсыларҙы мул тормошло итергә» тигән лозунг күтәрә.

И. В. Сталиндең «Большевизм тарихының ҡайһы бер мәсьәләләре тураһында» тигән, «Пролетарская революция» журналы редакцияһына яҙған хаты, һәм «Алехнович менән Аристовҡа яуап» большевизм тарихының иң мөһим проблемаларына арналғандар. Троцкийсыларҙы һәм партияның тарихын боҙоп күрһәтеүсе башҡа һәр төрлө фальсификаторҙарҙы фаш итеп, И. В. Сталин партия тарихын өйрәнеү эшен фәнни, большевистик рельсҡа ҡуйырға саҡыра, ленинизмдың һәр төрлө оппортунизмға ҡаршы аяуһыҙ ҡарашта тыуыуын, үҫеүен һәм нығыуын айырыуса ныҡ әйтеп үтә. И. В. Сталин троцкизмды контрреволюцион буржуазияның алдынғы отряды итеп һүрәтләй.

Демьян Бедныйға яҙған хатында И. В. Сталин, Демьян Бедныйҙың ҡайһы бер шиғри фельетондары антипатриотик тенденция менән һуғарылған һәм ленинизмдан асыҡтан-асыҡ сигенеү булып тора, тип күрһәтә. И. В. Сталин совет яҙыусыларын алдынғы пролетар яҙыусылар булыу кимәленә күтәрелергә саҡыра.

«Немец яҙыусыһы Эмиль Людвиг менән беседаһында» И. В. Сталин тарихта шәхестең һәм халыҡ массаларының роле тураһындағы мәсьәләне теоретик яҡтан яҡтырта.

Сит ил эшмәкәрҙәре менән булған күп кенә беседаларында И. В. Сталин Совет государствоһының тышҡы политикаһын тыныслыҡтың эҙмә-эҙлекле политикаһы итеп характерлай, СССР менән капиталистик илдәрҙең тыныс рәүештә бергә йәшәүҙәре һәм улар араһында эшлекле мөнәсәбәттәр урынлаштырыу мөмкин булыуын нигеҙләй.

«Партияның XVII съезында ВКП(б) Үҙәк Комитетының эше тураһында отчет докладында» И. В. Сталин, СССР-ҙа социализмдың бөйөк еңеүҙәренә йомғаҡ яһап, XVI съездан һуңғы осорҙа илдә тамырынан үҙгәртеп ҡороуҙар булыуын, социалистик халыҡ хужалығының һәм культураның бөтә тармаҡтарында партияның генеральный линияһының тулы тантанаһын күрһәтеүсе уңыштарҙы билдәләп үтә. И. В. Сталин, партия үҙенең уңыштары өсөн Маркстың, Энгельстең, Лениндең еңелмәҫ уҡыуына бурыслы, тип айырыуса ныҡлап әйтә. И. В. Сталин, партияның промышленность игенселек өлкәһендә һәм халыҡ хужалығының башҡа тармаҡтарында, культура һәм фән өлкәһендә киләсәктәге эш программаһын билдәләй. И. В. Сталин ойоштороу етәкселеген политик етәкселек кимәленә күтәреү бурысын, партияның идеологик эшен һәм кешеләр аңындағы капитализм ҡалдығына ҡаршы көрәште көсәйтеү бурысын алға ҡуя.

И. В. Сталин бөтә донъя экономик кризисе хәрәкәтенә анализ бирә, уның нигеҙе булып капитализмдың ғөмүми кризисе торғанлығын күрһәтә, капиталистик системаның ғөмүми кризисе шарттарында капитализм үҙенә бер төрлө депрессия кисерә, был депрессия яңы күтәрелешкә һәм промышленностең үҫеүенә алып бармай.

Һуғыш уты ҡабыҙыусыларҙың пландарын фаш итеп һәм ваҡиғаларҙың киләсәктә үҫешен ғилми рәүештә алдан күреп, И. В. Сталин, Советтар Союзына ҡаршы һуғыш империалистар өсөн иң ҡурҡыныслы һуғыш булыр. СССР халыҡтары революция ҡаҙаныштары өсөн ғүмерҙәрен аямайынса һуғышырҙар, һуғыш һөжүм итеүселәрҙең тулыһынса еңелеүенә, Европа һәм Азияның күп кенә илдәрендә революцияға һәм был илдәрҙең буржуаз-помещиктар хөкүмәттәрен тар-мар итеүгә килтерер, тип күрһәтә. И. В. Сталин СССР-ҙың тышҡы политикаһының тыныслыҡты һаҡлау политикаһы булыуын билдәләй. И. В. Сталин Советтар иленең оборонаға һәләтлелеген нығытыу кәрәклеге тураһында, империалистик государстволарҙың һөжүмдәренән уны яҡлауға әҙер тороуҙың кәрәклеге тураһында иҫкәртә.

И. В. Сталиндең иптәш Шатуновскийға, иптәш Ч-ға, Демьян Бедныйға, иптәш Этингә, иптәш И. Н. Бажановҡа хаттары; И. В. Сталиндең Ральф В. Барнес һорауҙарына яуаптары һәм Барнес әфәндең хатына яуабы һәм полковник Робинс менән беседаһы XIII томда беренсе тапҡыр баҫылып сығарылалар.

(ТАСС).

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Колхоз партия ойошмалары секретарҙәренә эштә—күберәк ярҙам

Колхоздарҙы эреләтеү менән колхоз партия ойошмалары алдына партия-политик эшкә тағы ла киңерәк ҡолас биреү һәм колхоз тормошоноң бөтә тармаҡтарына ла партия тәьҫирен таратыу буйынса яңы, ғәйәт ҙур бурыстар килеп баҫты.

ВКП(б)-ның Мишкә райкомы ошо яуаплы бурыстарҙы уңышлы үтәү өсөн колхоз партия ойошмаларын нығытыу һәм уларҙың эшен яңы шарттарға ярашлы итеп ҡороу өлкәһендә күп кенә саралар күрҙе. Хәҙер райондың бөтә колхоздарында ла партия ойошмалары бар. Колхоз партия ойошмаларында коммунистарҙың һаны 262-нән 365-кә етте. Эреләтелгән колхоз партия ойошмаларының һәр береһендә 30-ға тиҙлем коммунист иҫәпләнә, 6 колхоз партия ойошмаһында партия бюроһы һайланды. Баҫыусылыҡ бригадаларында һәм малсылыҡ фермаларында партия группалары ойошторолдо. Колхоз партия ойошмалары секретарҙәренең составы тамырынан яҡшырҙы. Эреләтелгәнгә тиклем колхоз партия ойошмаларында башланғыс белемле 23, урта белемле 14, юғары белемле 3 секретарь булһа, хәҙер башланғыс белемле 10, урта белемле 14, юғары белемле 4 секретарь иҫәпләнә.

Был ҙур үҙгәрештәр колхоз партия ойошмаларының эшмәкәрлеген байтаҡ яҡшыртты. Уларҙың колхоз правлениеһенең эшмәкәрлегенә контроллек итеү, социалистик баҫыу эшсәндәрен колхоз алдында торған бурыстарҙы уңышлы үтәү өсөн көрәшкә туплау һәләтлектәрен арттырҙы һәм колхоз производствоһында уларҙың ролдәрен күтәрҙе.

1950 йылдың ноябрендә ВКП(б)-ның Өлкә Комитеты бюроһы Мишкә райкомының отчетын тыңлап, уның эшендә серьез етешһеҙлектәр урын алыуын билдәләгәйне. Мишкә райкомы үҙенең пленумында Өлкә Комитет бюроһының был ҡарарын ныҡлап өйрәнде һәм унда күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөүгә йүнәлтелгән конкрет саралар билдәләп, күп кенә эштәр башҡарҙы. Хәҙер беҙҙең райком үҙенең эш методын ҡырҡа үҙгәртте, хужалыҡ бурыстарын үтәүҙә совет һәм хужалыҡ ойошмаларының эшен үҙ өҫтөнә алыуҙан баш тартты, тапшырылған эш һәм үҙ өҫтәренә йөкмәтелгән бурыстар өсөн совет һәм хужалыҡ ойошмаларының яуаплылығын күтәрҙе, уларҙың эшенә партия контролен көсәйтте.

Партия ойошмаларының эш тәжрибәләрен дөйөмләштереү һәм яҡшы методтарҙы таратыу маҡсатында райком ай һайын колхоз партия ойошмалары секретарҙәренең семинарҙарын үткәрә. Семинарҙарҙа «Партия ойошмаһының эшен планлаштырыу һәм коммунистарға поручениелар биреү», «Партия йыйылыштары үткәреү тәжрибәһе», «Колхоз правлениеһенең эшмәкәрлегенә партия ойошмаһының контроле», «Партия группаларының бурыстары» тигән һәм башҡа шундай темаларға докладтар ҡуйып тикшерелә. Бынан тыш партия ойошмалары секретарҙәренең докладтары райком бюроһы ултырыштарында һәм пленумдарында тыңлана.

Райкомдың VII пленумында Калинин исемендәге колхоз партия ойошмаһының секретары иптәш Ш. Имановтың отчеты тыңланды. Был партия ойошмаһында 26 коммунист иҫәпләнә. Уларҙың барыһы ла колхоз производствоһының яуаплы участкаларына беркетелгәндәр. Коммунистар теоретик белемдәрен күтәреү өҫтөндә эшләйҙәр һәм уларҙың барыһына ла партия поручениелары бирелгән. Бында партия йыйылыштарын һәм бюро ултырыштарын алдан әҙерләп юғары кимәлдә үткәреүгә айырыуса ҙур иғтибар бирелә. Колхозда партия ойошмаһының инициативаһы буйынса 3 йыллыҡ перспектив план төҙөлгән. Планда 2 кирбес заводы һалыу, колхоз электр станцияһына яңы генератор һәм турбина ҡуйыу, колхоздың ярҙамсы хужалығын киңәйтеү буйынса башҡа күп кенә төҙөлөш эштәре башҡарыу билдәләнгән.

Пленумда иптәш Имановтың доклады буйынса тәүге партия ойошмаларының секретарҙәре фекер алыштылар һәм уның эшендәге уңышлылыҡтарҙы һәм етешһеҙлектәрҙе күрһәтеп үттеләр. Шулай итеп райком колхоз партия ойошмалары менән йәнле бәйләнешен нығыта. Хәҙер райком үҙенең вәкилдәрен колхоздарға хужалыҡ эштәре менән генә шөғөлләнеү өсөн түгел, ә партия ойошмаларының эше менән дә танышыу һәм практик ярҙам күрһәтеү өсөн ебәрә.

Маленков, Калинин, Каганович исемендәге һәм башҡа колхоздарҙың бригадаларында һәм малсылыҡ фермаларында партия группалары төҙөлдө. Улар колхозсылар араһында яҡындан торып массовый-политик эш алып баралар: политик темаларға беседалар үткәрәләр, колхозсыларҙың социалистик ярышын ойошторалар.

Ауыл хужалығы артелдәрен эреләткәндән һуң, бригадаларҙа һәм фермаларҙа колхозсыларҙың йыйылыштарын үткәреү колхоз производствоһын күтәреүҙә бик ҙур урын тота. Партия ойошмалары был сараны яҡлап сығып, бригада йыйылыштарын колхозсылар араһында массовый-политик эш алып барыуҙың бер төрөнә әүерелдерҙеләр. Был өлкәлә Каганович, Микоян исемендәге колхоздар һәм «Коммунар» колхозы партия ойошмалары айырыуса яҡшы тәжрибә тупланылар. Уларҙа колхозсыларҙың бригада йыйылыштарында социалистик ярыштың барышын, эштең сифатын күтәреү, эшкә һалҡын ҡараусыларға ҡаршы көрәшеү һәм башҡа мәсьәләләр ҡарала, стена газеталары һәм боевой листоктар уҡылып, унда күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү саралары билдәләнә. Шунда уҡ политик докладтар йәки Тыуған илебеҙҙәге һәм сит илдәрҙәге мөһим ваҡиғалар тураһында информациялар менән коммунистар сығыш яһайҙар.

Яҡшы әҙерлек менән тәрән йөкмәткеле итеп үткәрелгән был йыйылыштар бик яҡшы һөҙөмтә бирә. Элек был колхоздарҙа бригадирҙар колхозсыларҙы өй һайын йөрөп эшкә билдәләй торғайнылар, ә хәҙер колхозсылар эшкә барыр өсөн бригадирға үҙҙәре киләләр. Был тәртип райондың башҡа колхоздарына ла таратыла.

Күрһәтелгән уңыштарға ҡарап, Мишкә райкомының эшендә етешһеҙлектәр бер ҙә юҡ икән тип уйларға ярамай әле. ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһының ҡарарын тулыһынса үтәү өсөн беҙгә бик күп эшләргә кәрәк әле.

Бөгөнгө көндә беҙҙең алдыбыҙҙа яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа агротехник сроктарҙа үткәреү өсөн колхозсылар массаһының барлыҡ көсөн туплау бурыстары тора. Был бурыстарҙы үтәүҙә колхоз партия ойошмаларынан ныҡышмалы эш талап ителә.

Ш. Сәлмиянов,
ВКП(б)-ның Мишкә райкомы секретаре.

СТЕНА ГАЗЕТАЛАРЫ КҮРГӘҘМӘҺЕНДӘ

Ғалимдәр йорто ла бүлмәһенең стеналарына матур итеп иллюстрацияға бай стена газеталары ҡуйылған. Бында юғары мәктәп работниктары профсоюзының өлкә комитеты матбуғат көненә арнап, күргәҙмә ойошторған. Күргәҙмәлә республика башҡалаһындағы институттарҙың стена газеталары ҡатнаша.

Лекциялар залы һәр ваҡыт хеҙмәтсәндәр менән тулы була. Унда һәр көндө тип әйтерлек политик һәм ғилми темаларға лекциялар уҡыла һәм доклад һөйләнә. Хеҙмәтсәндәр перерыв ваҡытында ла бүлмәләренә сығып, күргәҙмә экспонаттарын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарайҙар. Бүлмәләрҙең береһендә тик нефть институтының стена газеталары урынлаштырылған. Был газеталарҙың матур күренеше күргәҙмәгә [illegible].

Ысынлап та был, институттың партия һәм комсомол ойошмалары, профкомы һәм администрацияһының органы «За нефтяные кадры» газетаһы [illegible] 1951 йылда сыҡҡан 5 номере ҡуйылған. Һәр номерында [illegible] институттың алдынғы уҡытыусыларының эш тәжрибәләрен [illegible] өлгәшеүҙәре [illegible].

«За нефтяные кадры» газетаһы айға бер тапҡыр сыға. Унда уҡытыусыларҙың, студенттарҙың [illegible] тәнҡитләй [illegible] баҫыла. [illegible] номерҙәре [illegible] молниялар [illegible] «На коротких волнах» тип [illegible] карикатуралар [illegible] студенттарға юл [illegible] институттың [illegible].

[illegible] бүлеккә [illegible] «[illegible] кадры» [illegible]. Был [illegible] партия [illegible] комы һәм [illegible] газетаһы бик [illegible] айының [illegible] һәм [illegible] ҡ сәскәләре менән уратып алынған һәм унда тыныслыҡ символы булған күгәрсен һүрәте төшөрөлгән. Күгәрсен ауыҙындағы конвертҡа яҙылған: «Тыныслыҡ өсөн!» тигән лозунг йөрәктәрҙә Тыуған илгә мөхәббәтте һәм тыныс хеҙмәткә ҡайнар дәртте тағы ла көсәйтә һәм тағы ла ҡеүәтләндерә.

Был газета Башҡорт педагогия институты уҡытыусыларының, профессорҙарының һәм студенттәренең актив ҡатнашлығында сыға. Унда йәш шағирҙәрҙең шиғырҙары урынлаштырыла. Уҡытыусылар методик күрһәтмәләр бирәләр, ә алдынғы студенттәр үҙҙәренең тәжрибәләре менән уртаҡлашалар. Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү материалдары ла бик урынлы һәм үткер телдә бирелә. Бына шул уҡ 1 Май номерҙәндә ыңғай хәбәрҙәр менән бергә, «Тыныслаймасаҡ фаҡт» тигән тәнҡит материалы урынлаштырылған. Унда студент иптәш Гальцев беренсе курс комсомол ойошмаһының секретаре иптәш Погориловның студенттәр араһында тәрбиә эштәрен йомшаҡ ойошторғаны өсөн тәнҡитләй.

Күргәҙмәлә ауыл хужалығы институты факультеттәре партия ойошмаларының «Зоотехник», «Лесная практика ЛЗС» тигән һәм Авиация институтының «Авиамотор», «Наука и техника» исемле газеталары бар.

«Авиамотор» газетаһының күргәҙмәгә ҡуйылған биш номере лә күренеше яғынан бик матур. Ләкин йөкмәткеһенә килгәндә, дөйөм декларатив һүҙҙәрҙән торған оҙон материалдар менән тулған. Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү хәбәрҙәре юҡ тип әйтерлек. Миҫалға ошо йылдың 20 мартында сыҡҡан 15-се номерен алырға була. Унда «Тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе юғары кимәлгә күтәрергә» тигән баш мәҡәлә бирелгән. Ләкин уның эстәлегендә тәнҡит тураһында бер генә һүҙ ҙә әйтелмәгән.

Мәҡәләлә һүҙ институт партия ойошмаһының 20 февралдә булып үткән отчет-һайлау йыйылышынан башланып китә һәм айырым ыңғай моменттәр күрһәтелә лә:

— «Беҙҙең эшебеҙҙә ҙур ғына уңыштар булыуға ҡарамаҫтан, күп кенә етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Студенттәрҙең өлгәшеү кимәлдәре һаман да беҙҙе ҡәнәғәтләндерә алмай. Был өлкәлә эште төҙәтергә кәрәк...» тип тамамлап ҡуя. Йәки шул уҡ номерҙағы «Социалистик милкте һаҡларға» тигән хәбәрҙе алайыҡ. Бында библиотека мөдире иптәш Ҡасимов, айырым студенттәрҙе библиотеканан китап алалар ҙа, ҡайтарып бирмәйҙәр, тип дөйөм һүҙҙәр менән тәнҡитләй. Ә хәбәрҙең ахырын, студент иптәш Фокин ҡиммәтле журналды алды ла, таушалдырып, тышын йыртып ҡайтарҙы, тип тамамлай.

Дөрөҫ, иптәш Фокинде библиотеканың журналы менән һаҡһыҙ мөнәсәбәт иткәне өсөн ныҡ тәнҡитләргә кәрәк. Ә социалистик милк булған китапты үҙләштергән кешеләрҙе исемләп әйткәндә, был хәбәрҙең йоғонтоһо көслөрәк булыр ине. Газетаның редакторы күргәҙмәгә ҡуйылған башҡа газеталарҙы күреп тәжрибә алыр һәм үҙе сығарған газетаны партияның иң көслө ҡоралына әүерелдерер, әлбиттә.

Юғары мәктәп работниктәре профсоюзы өлкә комитетенен был ыңғай эшен хупларға кәрәк. Стена газеталарының редакторҙары үҙ-ара тәжрибә алышҡандан һуң, үҙҙәренең эштәрен артабан яҡшыртырҙар, тип ышанырға мөмкин.

И. Ниғмәтуллин.

Стена газетаһы—партия ойошмаһының боевой ярҙамсыһы

Баҡалы районы Карл Маркс исемендәге колхоздың партия ойошмаһы үҙенең органы «Үрнәк» исемле стена газетаһын (редакторы иптәш Ғәлиев) большевистик матбуғаттың бөтә талаптарына яуап бирерлек итеп сығарыуға бик ҙур иғтибар бирә. Был газета айына ике тапҡыр сығарыла. Унда урынлаштырылған материалдар бөтә колхоз һәм һәр бер колхозсы алдында торған көндәлек конкрет бурыстарға йүнәлтелгән булалар.

Газетаның һуңғы номерҙәндә өс хәбәр урынлаштырылған. Улар араһында колхоз председателе иптәш М. Хәсәновтың мәҡәләһе бар. Иптәш Хәсәнов был мәҡәләлә малсылыҡ работниктәренән һыйыр һауыусы З. Шакирова, быҙау ҡараусы С. Гәрәева иптәштәрҙең общественный малсылыҡты үҫтереүҙә һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреүҙә намыҫлы хеҙмәт өлгәләре күрһәтеүҙәре тураһында яҙа.

Ошо уҡ номерҙа ике тәнҡит материалы урынлаштырылған. Уларҙың береһендә агитатор иптәш Пәнғәлиеваның һуңғы ваҡытта агитацион-массовый эш алып бармауы тураһында яҙылған. Был хәбәр стена газетаһында сыҡҡандан һуң иптәш Пәнғәлиеваның эше партия йыйылышында тикшерелеп, тейешле сара күрелде.

Хәҙер «Үрнәк» стена газетаһы колхозда яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы үткәреү өсөн ныҡышмалы көрәш алып бара, был көрәштә үҙенең күп һанлы хәбәрселәренә таяна.

Х. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Парткабинет мөдирҙәренең кәңәшмәһе

ВКП(б) Өлкә Комитетенең пропаганда бүлеге ҡала һәм ҡайһы бер район партия кабинеттәре мөдирҙәренең кәңәшмәһен үткәрҙе. Кәңәшмәлә партия мәғарифе системаһында уҡыу йылын уңышлы тамамлау һәм йомғаҡлау занятиеләрен ойошҡанлыҡ менән үткәреүгә әҙерлек мәсьәләләре буйынса фекер алышыуҙар булды.

Беренсе булып ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитете партия кабинете мөдире иптәш Хамзина сығыш яһаны. Ул ҡала партия ойошмаһында уҡыу йылын уңышлы тамамлауға әҙерлек тураһында һөйләп, былай тине:

— Партия мәғарифе системаһында уҡыуҙарҙың беренсе көндәренән үк беҙ пропагандистар менән эшләүгә серьез иғтибар бирҙек. Пропагандистар өсөн даими хәрәкәт итеүсе 6 семинар регуляр эшләп килде.

— Беҙ һәр бер занятие өсөн, — ти иптәш Хамзина, — уҡыу планы төҙөп, уны пропагандистарға еткерҙек. Был программа материалын өйрәнеүселәрҙе дисциплиналаштырҙы. Большевизмдең теорияһын һәм тарихын үҙ алдарына өйрәнеүселәр менән бына шулай конкрет эш алып барҙыҡ. Быларҙың бөтәһе лә уҡыу материалын үтеүҙе срогында тамамларға мөмкинлек бирҙе.

Хәҙер төп иғтибар йомғаҡлау занятиеләрен ойошҡанлыҡ менән үткәреүгә әҙерләнеүгә тупланды. Пропагандистарҙың 29 апрелдә булған һуңғы семинарында уҡыу йылын тамамлау һәм йомғаҡлау занятиеләрен үткәреү мәсьәләләре тикшерелде. Парткабинет түңәрәктәрҙең тыңлаусылары өсөн ҡуҙатеү лекциялары ойоштора. Диалектик һәм тарихи материализм, идеологик мәсьәләләр буйынса ВКП(б) Үҙәк Комитетенең ҡарарҙары, һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡтың үтәлеш йомғаҡтары тураһында лекциялар үткәрелде.

Һүҙенең аҙағында иптәш Хамзина ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү буйынса юғарылатылған типтағы түңәрәктәрҙең эшендәге ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар тураһында һөйләне. Был фекергә кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың күбеһе ҡушылды.

— Һәр бер түңәрәктең эше менән урында ентекләп танышып,—ти ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитете парткабинете мөдире иптәш Фәхриева, — уҡыу йылын тамамлауҙың дифференциаль сроктарын билдәләнек. Йомғаҡлау занятиеләрен үткәреү методикаһы мәсьәләләре пропагандистарҙың семинарында тикшерелде.

ВКП(б)-ның Белорет ҡалаһы парткабинетенең мөдире иптәш Буловский ВКП(б) тарихен үҙ алдарына өйрәнеүселәр менән эшләү, улар араһында йомғаҡлау беседалары үткәреү мәсьәләләренә туҡталды. Бынан тыш фекер алышыуҙарҙа Чернова (Өфө), Неумевака (Ишембай), Раменский (Бөрө) иптәштәр ҡатнашты.

Кәңәшмә күп кенә мәсьәләләрҙе хәл итергә, уҡыу йылын ойошҡанлыҡ менән тамамлау буйынса практик бурыстарҙы асыҡларға ярҙам итте.

Парткабинет мөдирҙәре яҡшы әҙерлекле кәңәшмәләрҙе йышыраҡ үткәреү кәрәклеген әйттеләр.

Партия ойошмаларының эш тәжрибәләренән

Комсомолецтәр—партия ойошмаһының боевой ярҙамсылары

Сталин исемендәге эреләтелгән колхоздың производство тормошонда комсомолец һәм союздан тыш йәштәрҙең роле бик ҙур. Бөтәһенән элек, баҫыусылыҡ бригадаларында һәм малсылыҡ фермаларында эшләүселәр араһында йәштәр күпселек тәшкил итә. Ләкин эш, беҙҙең колхозда йәштәрҙең күп булыуында ғына ла түгел. Комсомолецтар хужалыҡтың иң яуаплы участкаларына беркетелгәндәр. Улар быйыл яҙғы сәсеүгә әҙерлек буйынса колхоздың файҙаланылмаған резервтәрен эшкә ҡушыуҙың инициаторҙары булдылар. Ҡыҙҙар һәм егеттәр агротехника саралары планын үтәү һәм ауыл хужалығы инвентарҙәрен социалистик һаҡлыҡҡа алыу буйынса бик күп эш башҡарҙылар.

Бына шуға күрә лә Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһы йәштәр менән эшләүгә, бигерәк тә комсомол ойошмаһы менән етәкселек итеүгә айырыуса әһәмиәт бирә.

Партия ойошмаһы йәштәрҙе колхоз производствоһының яуаплы участкаларына беркетеү, йәштәрҙең хеҙмәттә алдынғы булыуына өлгәшеү өсөн комсомол ойошмаһына ярҙам итә. Бының менән беҙ комсомолецтәрҙең партия ойошмаһының боевой ярҙамсылары булыуына өлгәшәбеҙ.

Хәҙер комсомол ойошмаһында 53 комсомолец иҫәпләнә. Улар бөтәһе лә турант-тура колхоз производствоһында эшләйҙәр.

Комсомол ойошмаһы секретаре иптәш Әхмәдуллин — йәштәрҙе ойоштороу эшенә яҡшы өйә булған коммунист. Уның инициативаһы менән үҙған йыл урожай йыйнауҙа ғына комсомолец-йәштәрҙең биш тапҡыр субботниктәре үткәрелде. Быйыл сәсеүгә әҙерлектең улар уң көнләгә уҙғарылды. Ошо ун көн эсендә инвентарҙәрҙе ремонтлау, орлоҡ таҙартыу һәм агротехника саралары планын үтәү буйынса колхоз байтаҡ уңыштарға өлгәште. Беҙҙең колхоз районда сәсеүгә әҙерлек буйынса беренселекте алды.

Комсомолецтәр һәм союздан тыш йәштәр техниканан ул бирә алғандың бөтәһен дә алыу һәм резервтәрҙе файҙаланыу, инвентарҙәрҙе социалистик һаҡлыҡҡа алыу башланғысын бер теләктән хупланылар. Күптән түгел беҙ партия һәм комсомол активы менән кәңәшләшеп, комсомол йыйылышын саҡырҙыҡ. Йыйылышҡа союздан тыш йәштәр ҙә килделәр. Унда коммунистар ҙа ҡатнаштылар. Йәштәр Иван Букеевтен патриотик башланғысын өйрәнделәр. Улар был гүзәл башланғысты яҡланылар һәм үҙҙәре лә конкрет йөкләмәләр алдылар.

Комсомолец иптәш Мөхәтдинов яҙғы сәсеүҙә ун рәтле сәскес машинаһы менән көндәлек норманы 4 гектар урынына 6 гектарға еткереп үтәргә һүҙ бирҙе. Иптәш Мөхәтдинов сәғәт графиге менән эшләргә, сәскес машинаһын, үҙенә беркетелгән аттарҙы һәм сбруйҙарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алырға, тик отлично сифат менән генә эшләргә һәм үҙенә бирелгән сәсеү заданиеһенең срогын өс көнгә ҡыҫҡартырға булды. Йыйылышта сығыш яһаусы коммунистар иптәш Мөхәтдиновтың ярыш йөкләмәһе тураһында туҡталып, әгәр бөтә комсомолецтар ҙа шулай эшләһәләр, быйыл яҙғы сәсеүҙе пландаштырған сроктан өс көн алда тамамлау мөмкин буласаҡ, тип һөйләнеләр. Йәштәр был башланғысты берҙәм яҡланылар һәм уға ҡушылдылар. Конкрет йөкләмәләр алып, улар үҙ-ара ярыш договоры төҙөнеләр.

Партия ойошмаһы комсомолецтарҙың политик уҡыуҙарын ойоштороуға, уларҙың марксистик-ленинсе белем кимәлен күтәреүгә айырыуса иғтибар бирә. Сөнки комсомолецтар йәштәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүҙә партия ойошмаһының боевой ярҙамсылары булырға тейештәр. Беҙҙең колхоз комсомолецтәре—ауыл библиотекаһының иң актив уҡыусылары. Улар «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын», бөйөк юлбашсыларыбыҙ Ленин, Сталин биографияларын өйрәнеү түңәрәктәренә йөрөйҙәр. Ә күп кенә комсомолецтар марксизм-ленинизм теорияһын үҙ алдарына өйрәнәләр. Йәштәр өсөн йыш ҡына лекциялар була. Иптәш Сталиндең биографияһы буйынса йәштәр өсөн лекциялар циклы уҡылды. Колхоз егеттәре һәм ҡыҙҙары клубта «Коммунистик һәм буржуаз мораль», «Совет йәштәре—коммунизм төҙөүселәр» тигән темаларға лекция тыңланылар.

Быйыл партия ойошмаһы күпселеге комсомолецтарҙан торған агитколлектив төҙөнө. Был агитаторҙар коллективе урындағы Советтарға, РСФСР һәм БАССР Верховный Советтәренә һайлауҙар ваҡытынан башлап колхозсылар араһында агитацион-массовый эш алып бара. Малсылыҡ фермаларында, баҫыусылыҡ бригадаларында махсус боевой листоктар сығарыла. Йәш колхозсылар менән Сталин премияһы лауреаттарының китаптарын коллектив рәүештә уҡыуҙар ойошторолдо. Агитатор-комсомолецтар Мөхәтдинов, Абдуллина, Вәлиева, Шакиров, Ғәлиуллин һәм башҡа иптәштәр йәштәр араһында айырыуса авторитет менән файҙаланалар.

Партия ойошмаһы агитколлективтең уңыштарын нығытыу буйынса ла конкрет саралар күрә. Йәш агитаторҙарҙың үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашыу кәңәшмәләрен үткәрә. Агитаторҙарҙың семинарҙары була, шулай уҡ агитаторҙарға эш пландары төҙәү, кәрәкле материалдар эҙләп табыу буйынса ярҙам күрһәтелә.

Колхоз йәштәре вожактарын коммунистик рухта тәрбиәләүҙе партия ойошмаһы үҙенең мөһим бурысы итеп иҫәпләй. ВКП(б) — комсомолдың ойоштороусыһы һәм етәксеһе ул. Йәштәрҙең политик һәм дөйөм белем кимәлен күтәреү — эреләтелгән колхоздың хужалыҡ һәм культура төҙөлөше бурыстарын уңышлы үтәүҙе тәьмин итеүсе сара. Беҙҙең партия ойошмабыҙ комсомол ойошмаһының эшмәкәрлеген тап бына ошо бурыстарға йүнәлтә лә иңдә.

Шуны ла әйтергә кәрәк, беҙҙең колхоз йәштәренең алдынғы эш тәжрибәләрен дөйөмләштереү эше ойошторолмаған әле. Стахановсы колхозсыларҙың эш тәжрибәләрен йәштәргә күсереү буйынса системалы эш алып барылмай. Күп ваҡытта йәштәрҙең инициативаһы партия ойошмаһы һәм колхоз правлениеһе тарафынан тейешле яҡлауҙы тапмай.

ВЛКСМ-дың Ҡыйғы райкомы (секретаре иптәш Ғилманов) комсомолец-йәштәрҙең колхоз производствоһында алдынғы булыуҙары өсөн ныҡлап көрәшмәй һәм йәштәрҙең культура, белем кимәлен күтәреү менән насар етәкселек итә. Райком колхозсы йәштәрҙең урынлы талаптарына әһәмиәт бирмәй. Мәҫәлән, беҙҙең колхоз комсомолецтәренең бөтә резервтарҙы файҙаланыу өсөн башлаған көрәше, комсомол райкомы тарафынан әле булһа хуплау тапҡаны юҡ.

Сәсеүгә төшер алдынан беҙ партия ойошмаһының йыйылышын үткәрҙек. Унда яҙғы сәсеү осорона комсомол ойошмаһының бурысы мәсьәләһе ҡаралды. Партия ойошмаһы йыйылышының ҡарары нигеҙендә комсомол ойошмаһы, союздан тыш йәштәрҙең ҡатнашлығы менән, үҙенең асыҡ йыйылышын үткәреп, яҙғы сәсеү осорона ойошманың конкрет бурыстарын билдәләне. Был саралар ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Комсомолецтар ысындан да партия ойошмаһының боевой ярҙамсылары булып әүерелделәр.

Беҙҙең колхоздың комсомолецтәре һәм союздан тыш йәштәре яҙғы сәсеүҙе ойошҡан рәүештә, иң ҡыҫҡа агротехник сроктарҙа үткәреү өсөн алған үҙҙәренең социалистик ярыш йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр.

Р. Заһитов,
Ҡыйғы районы Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһы секретаре.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Урманды яҡғынан һаҡлау тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр

Ҡыйғы районы таулы-урманлы [illegible]дар иҫәбенә инә. Ләкин урмандарҙы [illegible]лау эштәре насар ҡуйылғанлыҡтан, йылды меңәрләгән гектар урман [illegible] әрәм була. Быйыл 1950 йылда «Показатель», «8 Март», «Ш[illegible]», «Союз», «Нур», «Вожай» һәм [illegible] колхоздарҙың территорияһында бер [illegible] мең гектар урман янды. Йыл һайын [illegible]ғын булыу арҡаһында, «Крестьян[illegible]», «Красная заря», «Марс», «Нур», Ч[illegible] исемендәге колхоздарҙың территорияһында булған урманлы майҙандар [illegible] әүерелде. Тик бер «Вожай» колхозы территорияһында ғына 400 гектар [illegible] урманы янды. Янғын хатта ауыл[illegible] яҡынлашҡайны. Ауыл тик трактор [illegible]мында ғына янғындан һаҡлап алы[illegible]лынды.

Шуныһы ғәжәп, урманды һаҡ[illegible] яуапһыҙ ҡарап, государствоға [illegible]лаған һум зыян килтереүсе [illegible] райондың суд органдары тарафынан [illegible] кирет бер төрлө лә сара күрелмәне.

1951 йылда урмандарҙың янғын [illegible]ҡынысы тағы ла ҙурыраҡ. Сәнә[illegible] йыл комбайн менән урылған бер [illegible] мең гектар ашлыҡтың һаламы [illegible] алынмаған. Был ашлыҡ майҙанының [illegible]мап менән тоташыуы янғын сығыу[illegible]пап ҙур ҡурҡыныс тыуҙыра.

Ләүҙә урман бүлеге мөдире С[illegible] район ауыл хужалығы бүлеге [illegible] Ямалетдинов иптәштәр урманды [illegible]дан һаҡлауҙа профилактик саралар [illegible]мәйҙәр. Колхозсылар араһында [illegible]ҡаршы көрәш тураһында бер төр[illegible] аңлатыу эштәре алып барылмай.

Ғ. Хәмидул[illegible],
Әбйәлил МТС-ы директорының [illegible]литик эштәр буйынса урынбаҫ[illegible].

Онотолған культура учреждениеләре

Дүртөйлө районында культура-ағартыу учреждениеләре күп кенә. Ләкин улар[illegible] байтағы үҙ урынларында файҙаланыл[illegible]. Мәҫәлән, Киров исемендәге [illegible] клубы бына бер йыл инде сәлә[illegible] файҙаланыла. Быйыл ҙә уны сәсеү [illegible]тары киптереү өсөн сушилкаға әйлә[illegible]ҙеләр.

Куйбышев исемендәге колхоздың клу[illegible]ныһа һуңғы йылдарҙа бөтөнләй таш[illegible] һарайға оҡшап ҡалды. Уның бер генә [illegible]ҙәк тәҙрәһе лә юҡ. Быйыл ҡыш клуб[illegible] түбә ҡалайын тимер мейестәр яһау [illegible] һутеп алдылар. Ләкин колхоздың [illegible] инеһе был ваҡиғаларҙы күрмәне лә [illegible] белмәне лә.

Шулай уҡ район культура [illegible] үҙенең районда культура усағы булып [illegible]леп көндән-көн юғалта бара. Хәҙерге [illegible]ҡытта унда бер генә художественный [illegible] эшмәкәрлек түңәрәге лә эшләмәй. 1951 йылда бер нинди ҙә лекция һәм [illegible] булғаны юҡ. Районда һуңғы ваҡытта культура-ағартыу эше һүнеп ҡалды.

Ә. Тимерь[illegible].

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Октябрь натискыһы" типографияһы пропагандистарға нисек ярҙам итә?"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 67-се номерында Өфөләге «Октябрь натискыһы» типографияһы коллективенең «Пропагандистарға ярҙамға» журналының беренсе номерын баҫып сығарған ваҡытта брак яһалыуға юл ҡуйыуы тураһында «Һуңғы почтанан» рубрикаһы менән хәбәр баҫылғайны. О[illegible] айҡанлы «Октябрь натискыһы» типографияһы директоры иптәш Ғәбәйдуллин редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған был хәбәр типографияның [illegible]ләү цехы коллективенең дөйөм йыйылышында тикшерелде. Йыйылыш журналды баҫып сығарыуҙа брак яһалыуына бер юл ҡуйғыһыҙ хәл тип билдәләне. Брак яһаусы З. Первушина директорҙың приказы менән эшенән бушатылды.

„Малдарҙы тәрбиәләүгә иғтибар бирмәйҙәр"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 30 март номерында Туймазы районы эреләтелгән «[illegible] Байраҡ» колхозында общественный [illegible]дарҙы үрсетеү һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү өсөн көрәш ойоштормауы тураһында хәбәр баҫылғайны.

Туймазы район Советы исполкомы редакцияға хәбәр итеүенсә, «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған был хәбәр тикшерелеп, асылған етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөүгә ҡарата практик саралар билдәләнгән. «Малдарҙы тәрбиәләүгә иғтибар бирелмәй» тигән хәбәр «[illegible] Байраҡ» колхозы правлениеһенең ултырышында ҡаралып, малдарҙың кәмеүенә юл ҡуйыусы ветфельдшер Сафиуллин һәм малсылыҡ фермаһы мөдире Шиапов [illegible] материал төҙөлеп, Халыҡ судына [illegible]рылған. Һуңғы көндәрҙә малдар һаны кәмеүенә сик ҡуйылды. Бер уҡ ваҡытта малдарҙы тәрбиәләүҙе яҡшыртыу уларҙың продукт биреүсәнлеген күтәреү буйынса көндәлек эш алып барыла. [illegible] эштә ярҙам күрһәтеүҙә «Ҡыҙыл Байраҡ» колхозына участка зоотехнигы бер[illegible]гән.

МЕДИЦИНА РАБОТНИКТӘРЕ! ХАЛКТЫ МЕДИЦИНА ЯҒЫНАН ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮҘЕҢ СИФАТЫН АРТАБАН ЯКШЫРТЫУ ӨСӨН КӨРӘШЕГЕҘ!

Башҡорт АССР-ының врачтары һәм башҡа медицина, фармацевтика работниктары оҙаҡ йылдар буйына һәм яҡшы эшләгән өсөн СССР Верховный Советы Президиумының 1951 йылдың 14 апрелендәге Указы буйынса ордендар һәм медалдәр менән наградландылар.

Ленин ордене менән — 26, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән — 12, Почет билдәһе ордене менән—31 һәм медалдәр менән 100 кеше наградланды.

Ошо көндәрҙә БАССР Верховный Советы Президиумының председателе иптәш Ф. Заһафуранов медицина работниктарының бер төркөмөнә ордендар һәм медалдәр тапшырҙы һәм уларҙы яңы уңыштарға өндәне.

Хөкүмәтебеҙҙең юғары наградаһын алғанда, республикабыҙҙың алдынғы медиктәре, үҙҙәренең ҙур шатлыҡтарын, коммунистар партияһына, Совет хөкүмәтенә, лично иптәш Сталинға ҡайнар мөхәббәт, бирелгәнлек һәм рәхмәт һүҙҙәрен белдерҙеләр, сығыштар яһанылар. Газетабыҙҙың ошо номерында шул сығыштарҙың бер нисәһен баҫып сығарабыҙ.

Юғары наградаһы аклау өсөн

Мин хәҙер әлкән йәштәге кеше инде. Шулай булһа ла һаман йәшәгем килә, халкыма күберәк хеҙмәт итгем килә. Совет илендә беҙ почет менән, халҡыбыҙ һәм коммунистар партияһының хәстәрлеге менән солғап алынғанбыҙ. Тормошобоҙ көндән-көн гүзәлләнә бара. СССР халҡы хужалығын аяҡҡа баҫтырыу буйынса бурыстар үтәлде. Сталинсе биш йыллыҡ планы срогынан алда үтәлеү тураһындағы белдереү беҙҙең илебеҙҙең экономик көсөнөң тағы ла күберәк нығыуын күрһәтә. Илебеҙ тыныслыҡ һәм хеҙмәт юлынан тотроҡло барып, коммунизм төҙөйбеҙ.

Совет хөкүмәтенең юғары наградаһы беҙҙең, совет врачтарын, шатлыҡҡа сумдырҙы, тағы ла активерак эшләргә, алдынғы фән өлгәшеүҙәрен практикала тулыраҡ ҡулланырға саҡыра. Беҙҙең фидакәр хеҙмәтебеҙ илебеҙҙә коммунизм төҙөү эшенә күренекле өлөш булаҫаҡ. Һуғыш юҡ ителһен, тыныслыҡ еңһен тигән уйҙар менән эшләйбеҙ.

Е. Соболев,

махсус поликлиниканың бүлек мөдире, РСФСР Верховный Советы депутаты.

Совет врачы исемен юғары тотормон

Совет врачы — коммунизм төҙөүсе көрәшсе, халыҡ һаулығын һаҡлау һаҡсыһы. Беҙ быны бер ваҡыт хәтеребеҙҙән сығармайбыҙ һәм ошо яуаплы бурысты мөмкин тиклем яҡшыраҡ үтәү өсөн тырышабыҙ. Совет хөкүмәте, Ленин — Сталин партияһы беҙгә юғары ышаныс күрһәтә, бөтә шарттарҙы тыуҙыра.

Совет хөкүмәте минең күп йыллыҡ хеҙмәтемде Ленин ордене менән билдәләне. Ленин ордене! Бөйөк Ленин исемендәге орденде алыу ҙур бәхет! Ленин беҙгә яңы тормош, азатлыҡ юлын асып бирҙе, уның эшен дауам итеүсе бөйөк Сталин беҙҙе коммунизмға алып бара. Был иң юғары наградаға лайыҡлы булыу өсөн мин хеҙмәтемде тағы ла яҡшыртасаҡмын.

Мин үҙемдең бөтә көсөмдө артабан ҙа халыҡ һаулығын һаҡлауға бирермен һәм совет врачы исемен юғары тотормон.

Я. Агафонов,

балалар инфекцион больницаһының ординаторы.

Сталинсе хәстәрлек

Совет хөкүмәте Башҡортостандың бер төркөм медицина работниктарын СССР ордендары һәм медалдәре менән наградланы. Был — халыҡ һаулығын һаҡлау фронтында эшләүселәр тураһында ҙур һәм даими хәстәрлектең күренеше.

Башҡортостанда халыҡ һаулығын һаҡлау эше киң үҫеш алды, материал-техник шарттары ныҡ яҡшырҙы. Һуңғы йылдарҙа санитария-профилактика эше киңәйҙе. Юғары квалификациялы специалистар үҫеп сыҡты. Ленин—Сталин идеяһы менән тәрбиәләнгән был кадрҙар медицина өлкәһендә фидакәр эшләйҙәр, һәм башҡалары булышлыҡ итә. Сталин эпохаһында беҙ яңы шатлыҡ, бәхет кисерәбеҙ.

Совет хөкүмәте минең хеҙмәтемде шулай уҡ юғары баһаланы. Мин иң юғары награда — Ленин ордене менән наградландым. Үҙемдең ғүмеремде ошо халыҡ һаулығына бағышлаған хеҙмәтем өсөн бөйөк Сталинға ысын күңелдән рәхмәт белдерәм.

Юғары наградаға беҙҙә санитария-профилактика саралары тормошҡа ашырыу эшендә культуралыраҡ эшләү өсөн тағы ла активерак көрәшербеҙ.

Мин, коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәтенә Башҡортостандың санитария-профилактика работниктары партияға һәм иптәш Сталинға тоғро хеҙмәт итеүҙәрен ышандырам.

И. Гелдерман,

Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары.

Һөйөклө Сталинға ысын күңелдән рәхмәт

Миңә хәҙер 73 йәш. Оҙон хеҙмәт юлы үттем. Акушерка булып мин 45 йыл эшләнем. Ошо ваҡытта 32 йыл эшләгәнем һәм 25000 бала ҡабул итеп алдым. Уларҙан күбеһе хәҙер үҫеп етешкән! Бөгөн һуғыш геройҙары, передовик хеҙмәтселәр, специалистар, ғалимдар...

Бай тәжрибәмде ҙур шатлыҡ менән йәштәргә бирәм.

Минең хеҙмәтем Ленин ордене менән бүләкләнде. Беҙҙең тураһында хәстәрлек күргән һәм беҙгә юғары баһа биргән Совет хөкүмәтенә, һөйөклө Сталинға ысын күңелдән рәхмәт!

Акушерка Е. Бондарева.

Тағы ла яҡшыраҡ эшләрмен

Мин ярлы крәҫтиән ғаиләһында тыуғанмын. Шатлыҡлы һәм бәхетле тормошто бары тик Совет власы беҙгә бирҙе. Һәм Совет хөкүмәте мине республиканың башҡа медицина работниктары менән бергә юғары награда — Ленин ордене менән наградланы.

Мин тағы ла яҡшыраҡ һәм тырышыраҡ эшләргә вәғәҙә бирәм һәм беҙҙең тураһында хәстәрлек күргән бөйөк Сталинға рәхмәт!

Х. Еникеева,

Өфө ҡалаһының акушер-гинекология клиникаһы акушеркаһы.

Медицина работниктәренең рәхмәт һүҙе

Беҙ, медицина работниктәре, үҙебеҙҙең оҙаҡ йылдар халыҡ интерестарына хеҙмәт итеүебеҙ өсөн Совет хөкүмәтенең юғары наградаһына лайыҡлы булдыҡ. Врачтарға, медицина сестраларына, фармацевтарға тиҡ беҙҙең Советтар илендә генә шундай ҙур почет һәм хөрмәт. Хеҙмәтсәндәр һаулыҡ һаҡлау работниктарын яраталар, ә медиктәр уларҙың интерестарын күҙәтәләр. Беҙҙең илебеҙ врачтары хеҙмәт халҡы менән тығыҙ бәйләнгәндәр. Уларҙың барыһы бер сафта торол, коммунизм төҙәйҙәр, бөтә донъя халыҡтары араһында дуҫлыҡ һәм тыныслыҡ өсөн көрәшәләр.

Совет хөкүмәтенең юғары наградаһы— Ленин орденын күкрәгемә тағып, мин коммунизм йәмғиәтенең төҙөүселәрҙең сәләмәтлеген нығытыу һәм һаҡлау өсөн тағы ла нығыраҡ көрәшермен. Юғары награда алыу айҡанлы беҙ, ҡарт врачтар, тәрән шатлыҡ кисерәбеҙ. Беҙҙе шул тиклем юғары дәрәжәгә күтәргән өсөн, беҙҙең хеҙмәтебеҙҙе шул тиклем ҡиммәт баһалаған өсөн, совет медицинаһын алға үҫтереүгә кәрәкле бөтә шарттарҙы тыуҙырған өсөн хөкүмәтебеҙгә, бөйөк Сталинға бик ҙур рәхмәт!

И. Янсон,

беренсе номерлы аптека управляющийе.

Беҙ бәхетле тормош кешеләре

Беҙҙең илебеҙҙә күп миллионлы халыҡ менән бергә, коммунизм төҙөүсе медицина работниктарының хеҙмәте юғары баһалана.

Миңә хәҙер 57 йәш, шуның 45 йылын мин хеҙмәт фронтында үткәрҙем. Мин Россияла батша осорондағы ауыр тормош шарттарын үҙ елкәмдә кисерҙем.

Әле ҡайһы ваҡыт минән, һеҙгә нисә йәш, тип һорайҙар. Мин 34 йәш, тип яуап бирәм. Сөнки Октябргә тиклемге тормош — беҙҙең өсөн тормош түгел ине ул.

Мин туберкулезға ҡаршы көрәш өлкәһендә эшләйем. Был — ауыр инфекция. Батша Россияһынан ҡалған ошо мираҫҡа ҡаршы беҙ Павлов учениеһы нигеҙендә тағы ла кеслерәк көрәшербеҙ. Юғары награда беҙҙе шуға бурыслы итә.

С. Гробина,

БАССР-ҙың атҡаҙанған врачы.

Өфө ҡалаһының Ленин ордене менән наградланған врачтарынан һәм медицина работниктәренән бер төркөм. Һүрәттә (һулдан уңға): акушер-гинекология клиникаһының акушеркаһы Х. М. Еникеева, Башҡорт АССР-ы һаулыҡ һаҡлау министерствоһының дауалау бүлеге начальнигы Г. Н. Колотов, 1-се номерлы аптеканың управляющийе И. Я. Янсон, махсус поликлиниканың бүлек мөдире, РСФСР Верховный Советы депутаты Е. Ф. Соболев, туберкулез диспансерының бүлек мөдире С. З. Гробина, акушер-гинекология клиникаһының акушеркаһы Е. В. Бондарева иптәштәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

БӨЙӨК НАГРАДАҒА НАМЫҪЛЫ ХЕҘМӘТ МЕНӘН ЯУАП БИРЕРБЕҘ

Хужалыҡ һәм культура төҙөлешенең бөтә участкаларында әленән-әле яңы еңеүҙәргә өлгәшеп, совет халҡы Ленин—Сталин партияһы юлбашсылығында коммунизмдың тантанаһына бара. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планының срогынан алда уңышлы үтәлеүе тураһындағы Белдереү бөтә совет кешеләрен ситһеҙ шатландырҙы һәм яңы подвигтарға рухландырҙы.

Илыҡ хужалығындағы үҫештәр беҙҙең Совет илебеҙ ҙур аҙымдар менән алға, коммунизмға барыуын күрһәтә. Беҙ үҙебеҙҙең тыныс һәм бәхетле, көндән-көн яҡшыра барған тормошобоҙҙа, бөтә совет ватанбирлыҡтарында, Сталин эпохаһының бөйөк төҙөлештәрендә, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың гигант пландары үтәлешендә коммунизмдың һыҙаттарын күрәбеҙ, шатланабыҙ, законлы ғорурланабыҙ. Беҙҙең коммунистар партияһының, Совет хөкүмәтенең халыҡтар араһында тыныслыҡты һәм дуҫлыҡты нығытыуға йүнәлтелгән политикаһы Советтар Союзының халыҡ-ара авторитетын бөтә донъя алдында һаман күберәк арттыра.

Большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте халыҡ хужалығының һәм культураның бөтә участкаларында ла коммунизм төҙөүселәрҙең ижади хеҙмәтен бик юғары баһалайҙар. Беҙҙең илебеҙҙә хеҙмәт общественный әһәмиәткә эйә булып тора, намыҫлы, яҡшы эшләүсе кешеләр почет һәм хөрмәт менән файҙалана. Совет иле һаулыҡ һаҡлау работниктәренең хеҙмәтен дә ғәйәт юғары баһалай, сөнки улар шулай уҡ бөтә халыҡ менән бергә коммунизм төҙөү эшенә үҙҙәренең фидакәр хеҙмәттәрен һалалар.

Илебеҙҙең 31 меңдән артыҡ медицина работнигы оҙаҡ йылдар буйына һәм яҡшы эшләгән өсөн ордендар һәм медалдәр менән наградланды. СССР Верховный Советы Президиумы Указы менән, шул иҫәптән Башҡортостандың 169 медицина работнигы ла хөкүмәт ордендары һәм медалдәре менән наградланды. Был юғары награда халыҡ һаулығын һаҡлау, медицина кадрҙары тураһында сталинсе хәстәрлектең тағы бер асыҡ күренеше булып тора.

Ошо көндәрҙә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Заһафуранов Өфөнөң бер төркөм медицина работниктәренә хөкүмәт ордендәрен һәм медалдәрен тапшырҙы.

Республикабыҙҙың Ленин ордене менән наградланған ҡарт врачтарынан Я. Ф. Агафонов, И. А. Агапов, В. К. Ворошилов, И. И. Гелдерман, С. З. Гробина, Г. Н. Колотов, В. Х. Огородников, акушеркаларҙан Х. М. Еникеева, Е. В. Бондарева, медсестраларҙан М. И. Крылова һәм А. С. Никифорова, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланған врач Алферов иптәштәр хөкүмәтебеҙҙең юғары наградаһын алыу шатлығы айҡанлы, трибунаға бер-бер артлы күтәрелеп, үҙҙәренең 30—40-ар йыл буйына хеҙмәтсән халыҡ һаулығын һаҡлау фронтында намыҫлы эшләүҙәре тураһында һөйләп, коммунистар партияһына, Совет хөкүмәтенә, иптәш Сталинға ысын күңелдәренән рәхмәт белдерҙеләр. Улар шулай уҡ артабан да коммунизм төҙөүселәрҙең алғы сафында буласаҡтары һәм бөтә донъя халыҡтары араһында тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ өсөн көрәшәсәктәре тураһында әйттеләр. Врач Агафонов үҙенең сығышында: Ленин минең уйымда, Ленин минең йөрәгемдә, уның ордене минең күкрәгемдә, ул минең ғүмеремдең һуңғы осорон яҡтыртыр. Мин ҡартмын инде, ләкин коммунизм өсөн, тыныслыҡ өсөн көрәшселәрҙең алдынғы сафында барырға миндә көс етерлек әле. Беҙ, совет медиктәре, халыҡтың һаулығын һаҡлау постында тағы ла ҙурыраҡ хеҙмәт күрһәтергә бурыслыбыҙ. Совет кешеләре таҙа, сәләмәт, гүзәл булырға тейештәр, тине. Ордендар һәм медалдәр алған башҡа иптәштәр ҙә тәрән шатлыҡ, партиябыҙға, Совет хөкүмәтенә, иптәш Сталинға сикһеҙ бирелгәнлек, мөхәббәт, патриотизм, ғорурлыҡ тойғолары менән тулы булған ялҡынлы сығыштар яһанылар, бөйөк Сталинға ҡат-ҡат рәхмәт әйттеләр, уға оҙон ғүмер теләнеләр.

Иптәш Заһафуранов медицина работниктәрен хөкүмәт наградаһы алыуҙары айҡанлы ҡайнар ҡотланы һәм һаулыҡ һаҡлау эшендә яңы уңыштарға өлгәшеүгә саҡырҙы.

Хөкүмәт наградаларын алыу көнө беҙгә, медицина работниктәренә, ҙур, онотолмаслыҡ байрам булды. Юғары награда беҙҙең көстәребеҙҙе арттыра, беҙҙе халыҡ бәхете өсөн яңы еңеүҙәргә рухландыра.

Быға яуап итеп, беҙ коммунизм төҙөүселәрҙең сәләмәтлеген яҡшыртыуға бөтә көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ. Беҙ үҙебеҙҙең бөтә тәжрибәбеҙҙе, бөтә белемдәребеҙҙе халыҡты медицина һәм санитария яғынан хеҙмәтләндереүҙең сифатын артабан яҡшыртыуға бирербеҙ. Медицина эшенең культураһын күтәреү, дауалау-профилактика учреждениеларенең эшен дөрөҫ ойоштороу, алдынғы фән өлгәшеүҙәрен медицина практикаһына ҡыйыуыраҡ индереү, дауалау оборудованиеларын белеп файҙаланыу, тигән һүҙ. Медицина эшенең культураһын күтәреү — ауырыуҙарға һиҙгер һәм яҡшы мөнәсәбәттә булыу, уны ысын хәстәрлек менән солғап алыу, уны тиҙерәк сәләмәтләндереү сараларын күреү ул.

Беҙ, совет врачтары, Совет хөкүмәтенең беҙҙе хөрмәтләүенә яуап итеп, тағы ла яҡшыраҡ эшләргә, илебеҙҙә коммунизм тантанаһы өсөн көрәшергә һүҙ бирәбеҙ.

Совет илендә медицина работнигенең шундай юғары дәрәжәгә күтәрелгәне өсөн беҙҙең бөйөк учителебеҙ, совет врачтарының иң яҡын дуҫы һәм атаһы бөйөк Сталинға беҙҙән меңдәрсә рәхмәт!

М. Санаева,

БАССР-ҙың атҡаҙанған врачы.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә А. А. Громыко белдереүе

ПАРИЖ, 10 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары әҙерлек кәңәшмәһенең АҠШ вәкиле Джессеп председателлегендә 10 майҙа булған 48-се ултырышында А. А. Громыко түбәндәге белдереүҙе яһаны:

Совет делегацияһы беҙҙең кәңәшмә осраған ҡыйынлыҡтарҙың сәбәптәре тураһындағы мәсьәләгә ҡағылып киткәйне инде. Факттарға таянып, беҙ, өс держава вәкилдәре, һүҙҙә килешеүгә өлгәшергә теләйбеҙ, тип белдерһәләр ҙә, көн тәртибе буйынса һөйләшеүҙәрҙең барышын ҡатмарландырыу өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе эшләйҙәр, тип күрһәткәйнек инде.

Былдай тактика өс держава 2 майҙағы кәңәшмә ҡарамағына индерелгән һуңғы тәҡдимдәрендә лә үҙенең сағылышын тапты. Был тәҡдимдәр: бөтә өс «А», «В» һәм «С» альтернативтәре ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарауға йәки бөтөнләйгә юл ҡуймауға, йәки иһә мөгәйән формулировканы ҡабул итеү юлы менән уның әһәмиәтен бөтөнләйгә юҡҡа сығарыуға иҫәпләнгәндәр, был формулировкала ошо төп мәсьәлә «ҡоралланыуҙар кимәле тураһындағы» мәсьәләгә буйһондоролa. Быннан тыш, өс держава тәҡдимдәре дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһында түгел, ә ғөмүмән ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһында хәтергә төшөрәләр. Икенсе төрлө әйткәндә, өс держава бөтә был эште алдан уҡ уңышһыҙ дискуссияға дусар итеүсе формулировканы тәҡдим итә.

Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләгә килгәндә, уның формулировкаһы килешелгән булыуға ҡарамаҫтан, өс держава вәкилдәренең тәҡдимдәре, шулай уҡ был мәсьәләне министрҙарҙың тикшереүен йәки бөтөнләйгә күҙҙә тотмайҙар, йәки уны һуңғы планға ҡуялар. Мәҫәлән, «А» альтернативендә өс держава вәкилдәре был мәсьәләне тик, гөрсә улар үҙҙәре был «һатыулашыуҙың» реаль булып тормауын яҡшы белһәләр ҙә, ҡоралланыуҙар тураһындағы мәсьәлә буйынса үҙ тәҡдимдәрен Советтар Союзы ҡабул иткән ваҡытта ғына беренсе планға ҡуйырға ризалар.

«В» альтернативендә был мәсьәлә арткы планға ҡуйылған һәм ҡоралланыуҙарға һәм ҡоралды көстәргә ҡағылған положениеләрҙән һуң ҡуйылған, был положениеләрҙең редакцияһы әле булһа килешелмәйенсә ҡала.

Аҙаҡ килеп, «С» альтернативендә Германияны демилитаризациялау тураһында ғөмүмән хәтергә төшөрөлмәй.

Дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләгә мөнәсәбәт был кәңәшмәлә ҡатнашыусы илдәрҙең дөйөм политикаһына характеристика биреү өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Кәңәшмә барышында ике политиканың барлығы яғынан асыҡ күренде. Уларҙың береһе, төрлө общественный системаларҙың йәшәүенә ҡарамаҫтан, халыҡтар араһында тыныслыҡты нығытыуҙы һәм улар араһында политик һәм экономик бәйләнештәрҙе үҫтереүҙе үҙенең маҡсаты итеп ҡуя. Был политика тыныс киң граждандар төҙөлешен йәйелдереүгә һәм халыҡтың тормош кимәлен күтәреү маҡсатында илдең бөтә халыҡ хужалығын күтәреүҙе тәьмин итеүгә, хаҡтарҙы систематик арзанайтыуға, эш хаҡын арттырыуға, халыҡ талабын арттырыуға, культураны, халыҡ мәғарифен һәм һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереүгә йүнәлтелгән. Былдай политиканы тормошҡа ашырыу өсөн государство средстволарының тыныс төҙөлешкә һәм халыҡ тормошон яҡшыртыуға китеүе кәрәк, ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыуҙың булмауы кәрәк, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙең ҡыҫҡартылыуы кәрәк.

Был политиканы Советтар Союзы хөкүмәте үткәрә. Дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы совет тәҡдиме шунан килеп сыға ла инде.

Көнбайыш державаларҙың ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыуҙы тормошҡа ашырыуҙары айҡанлы әленән-әле арта барған налогтар ауырлығын, хаҡтарҙың ҡыйбатланыуын әленән-әле күберәк тойоусы башҡа илдәр халыҡтарының интерестәренә лә былдай политиканың ярашлы булыуын иҫбатлап тороуҙың кәрәге бармы икән?

Ләкин икенсе төрлө политика ла бар. Ул хәрби промышленносте үҫтереүгә, граждандар промышленносен ҡыҫҡартыуға, хәрби политик блоктар төҙөүгә, башҡа государстволарҙың территорияларында хәрби, хәрби-диңгеҙ һәм хәрби-һауа базаларын төҙөүгә һәм тыныслыҡ интерестәре менән бер ниндәй уртаҡлығы булмаған башҡа сараларҙы үткәреүгә йүнәлтелгән. Әлбиттә, былдай политиканы үткәреү тыныс хужалыҡ һәм культура ихтыяждарына государство ассигнованиеләрен кәметеүгә һәм уларҙы яңы һуғышты әҙерләү маҡсатына күсереүгә алып бара. Был политика халыҡҡа һалынған налогтың артыуына, киң ҡулланыу тауарҙарына хаҡтарҙың ҡыйбатланыуына, эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡын кәметеүгә һәм ғөмүмән промышленниктарҙың — ҡорал менән һатыу итеүселәрҙең сиктән тыш табыштарын арттырыу менән бер үк ваҡытта, хеҙмәтсәндәрҙең доходтарын кәметеүгә, тыныс әһәмиәттәге ғилми һәм культура учреждениеларын ябыуға алып бара.

Былдай политиканы АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре үткәрә, һәм ул дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса беҙҙең кәңәшмәбеҙҙә өс держава вәкилдәренең кире позицияһында ла үҙенең сағылышын тапты.

Европала һәм башҡа өлкәләрҙә халыҡтарҙың именлеген һәм тыныслыҡты нығытыу өсөн тап бына дүрт державаның — СССР, АҠШ, Великобритания һәм Францияның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен киҫкенрәк ҡыҫҡартыу ҙур әһәмиәткә эйә булыр ине. Был эш Европала йәшәгән көсөргәнешле хәлде серьез йомшартыр ине һәм һуғыш тоҡандырыусыларҙың һәм уның пропагандистарының пландарына иң көслө удар булыр ине, һәм, шулай итеп, яңы һуғыш ҡурҡынысын бөтөрөүгә булышлыҡ итәр ине. Дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу халыҡтың киң ҡатламдары елкәһенә ауыр йөк булып төшөүсе ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыуға һәм хәрби бюджеттарҙың үҫеүенә сик ҡуйыр ине. Шул уҡ ваҡытта ул был илдәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу өсөн мөһим нигеҙлек булыр ине, был нигеҙлектә, моғайын, бер кем дә кире ҡаҡмаҫ.

Быларҙың бөтәһе лә, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне министрҙар Советының көн тәртибенә индереү хаҡындағы тәҡдимде АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре ни өсөн кире ҡағалар? тигән законлы һорауҙы ҡуйырға нигеҙлек бирәләр. Был кире ҡағыу дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртырға һәм, улар үҙҙәре үк таныуынса, Европалағы көсөргәнешле хәлдең сәбәптәрен бөтөрөргә уларҙың теләүен күрһәтәме ни? Әлбиттә, күрһәтмәй.

Был мөһим мәсьәлә буйынса килешеүгә өлгәшеүҙе еңеләйтеү һәм уны көн тәртибенә индереү өсөн совет делегацияһы беҙҙең кәңәшмәбеҙ барышында бөтә мөмкин булған сараларҙы күрҙе. Билдәле, башта совет делегацияһы министрҙар кәңәшмәһендә «Дүрт державаның — СССР, АҠШ, Великобритания һәм Францияның ҡоралды көстәрен һис киҫекмәҫтән ҡыҫҡарта башлау тураһындағы» (ошо йылдың 5 мартында индерелгән тәҡдим) мәсьәләне ҡарарға тәҡдим итте. Көнбайыш державаларҙың вәкилдәре был формулировканы сиктән тыш радикаль тип иҫәпләп, уға ҡаршы килделәр һәм, беренсенән, ҡоралды көстәрҙе һис киҫекмәҫтән ҡыҫҡартыу тураһында әйтелмәүен һәм, икенсенән, ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы пункттың айырым пункт сифатында индерелеүен түгел, ә Европалағы халыҡ-ара көсөргәнешлек сәбәптәре һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу буйынса саралар тураһында улар тарафынан тәҡдим ителгән дөйөм пунктҡа индерелеүен талап иттеләр.

Совет делегацияһы 14 мартта өс держава делегацияһының был өлкәләге теләктәренә ҡаршы килмәне һәм өс держава делегацияһының был теләктәрен иҫәпкә алған яңы тәҡдим индерҙе.

Ләкин шуға ҡарамаҫтан, 16 мартта өс делегация көн тәртибенең беренсе пунктының яңы проектын индерҙе, унда ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә «ҡоралланыуҙар кимәле» тип аталған мәсьәләгә туранан-тура буйһондоролғайны. Тәбиғи, был беҙҙең кәңәшмәбеҙҙең эшендә яңы ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы.

20 һәм 28 мартта совет делегацияһы, был пункт буйынса килешеүгә өлгәшергә ынтылып, сит ил эштәре министрҙәре Советы сессияһында «ҡоралланыуҙар кимәле» тураһындағы һәм халыҡ-ара контроль тураһындағы мәсьәләләрҙең тикшерелеүе хаҡында өс делегация теләген иҫәпкә алыусы яңы тәҡдимдәр индерҙе.

Был тәҡдимдәр айҡанлы ошо мәсьәлә буйынса килешеүгә өлгәшеүҙә булған ҡартәләр бөтөрөлергә тейеш кеүек ине. Ләкин унан һуң да, АҠШ, Франция һәм Великобритания делегациялары әленән-әле яңы уйлап табылған кире ҡағыуҙарҙы килтереп, күрһәтелгән тексты ҡабул итергә риза булманылар.

Был мәсьәлә буйынса өс державаның былдай позицияһын нисек баһаларға? Беҙ уны АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең үҙҙәренең ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартырға теләмәүҙәрен күрһәтеүсе итеп кенә, ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу политикаһын уларҙың артабан да үткәрергә уйлауҙарын күрһәтеүсе итеп кенә баһалай алабыҙ. Был һығымта шулай уҡ өс держава вәкилдәренең белдереүҙәре менән дә нығытыла. Беҙҙең кәңәшмәбеҙҙә Джессеп әфәндене, Дэвис әфәндене һәм Пароди әфәндене үҙ хөкүмәттәренең «ҡоралланыуҙар политикаһын» үткәреүе һәм был политиканы үҙгәртергә йыйынмауҙары тураһында бер нисә тапҡыр һәм туранан-тура белдереүҙәре факт булып тора бит. Франция вәкиле Пароди, Франция хөкүмәте дүрт держава министрҙәре кәңәшмәһендә Францияның ҡоралланыуҙарын ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне түгел, ә хәҙерге ваҡытта йәнәһе етерлек һанда булмаған ҡоралланыуҙарын артабан арттырыу тураһындағы мәсьәләне генә ҡуя ала, тип туранан-тура белдерҙе.

(Аҙағы 4-се биттә).

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә А. А. Громыко белдереүе

(Аҙағы. Башы 3-сө биттә).

Биддәле, беҙҙең кәңәшмәбеҙ барған көндәрҙә АҠШ президенте Трумэн дә был өлкәлә бер нисә тапҡыр тағы ла асығыраҡ итеп әйтте. Ул АҠШ ҡоралланыуҙар өлкәһендәге үҙ политикаһын артабан да үткәрәсәк, тип Америка халҡына туранан-тура белдерҙе.

Был белдереүҙәр АҠШ-тың хәрби маҡсаттарға ассигнованиеләрен артабан арттырыу һәм был ассигнованиеләрҙе 60 миллиард долларҙан да артығыраҡ суммаға еткереү тураһында АҠШ конгресына Трумәндең хатында ла үҙҙәренең раҫланылыуын таптылар, был, АҠШ-тың һуғышҡа тиклемге — 1938—39 йылдарҙағы хәрби расходтарынан 60 тапҡырға тиерлек һәм АҠШ-тың 1941—42 бюджет йылында һуғышта булған расходтарынан ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа артыҡ тигән һүҙ. Был — дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһында совет тәҡдименә туранан-тура яуап булып торған хөкүмәт акты. Быларҙың бөтәһе лә АҠШ вәкиле ал дворецта үткәрелгән кәңәшмәлә, АҠШ хөкүмәте йәнәһе Европалағы хәлде яҡшыртыуға һәр дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға ысынлап та ынтыла, тип, әлбиттә, хәҙер инде бер кем дә ышанмаған, буш декларациялар менән сығыш яһаған ваҡытта үткәрелә. Был күренеш, ысынлап та, алдаларға ғына лайыҡлы булған күренеш.

Күрәһең, общественный фекер баҫымы аҫтында өс держава ал дворецта барған беҙҙең кәңәшмәбеҙҙә үҙҙәренең яңы тәҡдимдәрендә «ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһында» хәтергә төшәрергә мәжбүр булдылар. Ләкин, улар, беренсенән, был мәсьәләне лә «ҡоралланыуҙар кимәленә» бүйһондорҙолар, һәм, икенсенән, **дүрт державаның** ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса тәҡдимдән туранан-тура һәм ҡырҡа баш тарттылар.

Өс делегация тәҡдименә ярашлы рәүештә, министрҙәр башта бөтә илдәрҙең йәшәп килгән «ҡоралланыуҙар кимәлен» тикшерергә тейештәр, шул уҡ ваҡытта, өс держава вәкилдәренең аңлатыуына ҡарата «айырым илдәрҙең үҙҙәренең ҡоралланыуҙары кимәлен етерлек түгел, тип таныуҙары мөмкин һәм **был кимәлде арттырыу тураһында** тәҡдим тыуҙырыуы мөмкин».

Унан һуң министрҙәргә «контроль тураһындағы» мәсьәләне тикшерергә тәҡдим ителә. Ләкин Джессеп, Дэвис һәм Пароди сығыштарынан күренгәнсә, ҡоралланыуҙарҙы **ҡыҫҡартыуға** контроль түгел, ә «ҡоралланыуҙар кимәленә контроллек итеү» күҙҙә тотола. Икенсе төрлә әйткәндә, был кимәлде айырым илдәргә **арттырыу** мөмкинлегенә контроллек итеү һәм башҡа илдәргә ҡоралланыуҙарҙы ихтимал ҡыҫҡартыуға ғына контроллек итеү күҙҙә тотола.

Һәм, министрҙәр был үтеп сыға алмаҫлыҡ һаҙлыҡтан нисек булһа ла сыға алһалар ғына уларға дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне түгел, ә тағы ла ғөмүмән ҡоралланыуҙар һәм ҡоралды көстәр «кимәленә» ҡарап ҡыҫҡартыу мөмкинлеге тураһындағы мәсьәләне генә тикшерергә тәҡдим ителә. Дүрт илдән тыш башҡа бөтә илдәр өсөн дүрт держава министрҙәренең ҡарар ҡабул итә алмауҙары асыҡ булғас, өс делегация тәҡдименә ярашлы рәүештә һүҙ тик дүрт министрҙең «тәҡдимдәр» эшләүе тураһында ғына бара, был тәҡдимдәр Англия вәкиле Дәвистең һүҙҙәренә ҡарағанда, тик «мораль ауырлыҡҡа ғына» эйә була алалар һәм улар дүрт держава министрҙәре тарафынан йәки БМО-ға индерелһендәр, йәки «ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартыу буйынса махсус конференция» ҡарамағына индерелһендәр.

Үҙҙәре тарафынан тәҡдим ителгән был юлдың ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу эшендә ниндәй ҙә булһа ыңғай һөҙөмтәләр бирә алмауын көнбайыш державаларҙың вәкилдәре яҡшы аңлайҙар. Мәҫәлән, шул уҡ Дэвис 12 мартта үткәрелгән беҙҙең етенсе ултырышыбыҙҙа түбәндәгеләрҙе белдерҙе:

«Әлбиттә, былай итеп тикшергәс ваҡытта ҡайһы бер хөкүмәттәрҙең ҡоралланыуҙарҙы һис киҫекмәҫтән ҡыҫҡарта башлауҙары, ә икенселәре, ихтимал, быны эшләй алмайбыҙ, тип, табыуҙары мөмкин. Һәм был, ошолай килеп сыҡһа, әлбиттә, быны эшләй алмаған һәр бер ил ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартырға теләүселәрҙе ҡыйын хәлгә ҡуясаҡ».

Өс держава вәкилдәренең аңлатыуы буйынса, улар беҙҙе бына ҡайҙа табып тарталар икән!.. Дэвистең был белдереүенән көнбайыш держава тәҡдимдәрен ҡабул итеүҙең бөтә донъя общественносе фекерен алдауҙы аңлатыуы күренмәйме ни? Өс держава милләттәр лигаһының күңелһеҙ тәжрибәһен ҡабатларға теләй, был лига Великобритания һәм Франция ғәйебе менән ҡоралһыҙландырылыу һәм ҡоралланыуҙы ҡыҫҡартыу мәсьәләләрен оҙаҡ йылдар буйына уңышһыҙ тикшерҙе һәм был юнәлештә ниндәй ҙә булһа реаль һөҙөмтә эшләргә көсһөҙ булып сыҡты. Хәҙер беҙгә ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуҙың бөтә эшен аллан уҡ тулы емерелеүгә дусар итеүсе эштең ни ҡарарлы методтарын ҡабул итергә тәҡдим итәләр. Ләкин үҙ ваҡытында Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең ҡоралһыҙландырылыу эшенә милләттәр лигаһында саботаж яһағанлыҡтарын донъя халыҡтары хәтерләйҙәр. Улар шулай уҡ БМО Генеральный Ассамблеяһының ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһында 1946 йылдың 14 декабрендәге билдәле резолюцияһын үтәүҙе АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәренең өҙөүҙәрен дә һәм ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартыу урынына ҡоралланыуҙар артынан тотҡарһыҙ ҡыуыуға башлауҙарын да хәтерләйҙәр.

Дүрт держава ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһында ябай һәм асыҡ совет тәҡдименең тартыу көсөн общественность алдында ҡаҡшатыу өсөн, АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре бер ялған дәлил өҫтөнә икенсеһен өйәләр. Мәҫәлән, был совет тәҡдименә ҡаршы килеп, улар, йәнәһе, беҙҙең хөкүмәттәребеҙ тарафынан үткәрелгән ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу политикаһы Советтар Союзының көйәтле ҡоралланыуы менән килеп тыуа, тип буш һүҙҙәр менән белдерәләр. Ләкин был яла СССР Министрҙәр Советы Председателе И. В. Сталиндең «Правда» хәбәрсеһе менән билдәле бесәдаһында фаш ителгәйне инде. Унда Советтар Союзы һуғыштан һуң 1945 — 1948 йылдарҙа үҙ ғәскәрҙәрен демобилизовать итеүҙе үткәрҙе һәм бер үк ваҡытта Волгала, Днепрҙа, Аму-Дарьяла бөйөк төҙөлештәрҙе башлап, үҙенең граждандар промышленносен йәйелдерен ебәрҙе, тип күрһәтелгәйне.

Совет хөкүмәтенең Великобритания хөкүмәтенә 1951 йылдың 24 февралендәге нотаһында, АҠШ, Великобритания һәм Францияның ҡоралды көстәре үҙҙәренең һандары яғынан хәҙер Советтар Союзының ҡоралды көстәре һанынан ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа артыҡ, тип күрһәтелгәйне.

Йәнәһе, көнбайыштағы өс державаның ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу политикаһы Советтар Союзы ҡоралланыуҙарының артыуы менән тыуҙырылды, тигән раҫлауҙарҙың мәғәнәһеҙлеге тағы шул факт менән фаш ителә, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһында үҙ тәҡдимен индереп, Советтар Союзы хөкүмәте шуның менән үҙенең ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен дә ҡыҫҡартыуға ҡарата инициативаны үҙ өҫтөнә алды. Шул уҡ ваҡытта, көнбайыштағы өс держава был совет тәҡдимен кире ҡағып, ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыуҙы үҙҙәренең артабан да тормошҡа ашырырға, налог ауырлығын тағы ла күберәк арттырырға уйлауҙарын бөтә донъяға тағы ла бер тапҡыр күрһәттеләр.

Көнсығыш Европа илдәренең ҡоралланыуҙарына нигеҙһеҙ һылтаныуҙар менән дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индереү тураһындағы тәҡдимгә үҙҙәренең кире мөнәсәбәт итеүҙәрен өс держава хөкүмәттәренең нигеҙләргә маташыуҙары ла шулай уҡ нигеҙһеҙ булып тора. Был өлкәлә үҙҙәренең буш һүҙҙәр менән әйтелгән раҫлауҙарын иҫбатлауслы ниндәй ҙә булһа фактарҙы көнбайыш держава вәкилдәре килтерә алмаһылар, сөнки быңдай фактар юҡ. Күрәһең, был мәғәнәһеҙ раҫлауҙар өс держава хөкүмәттәренә совет тәҡдимен кире ҡағыу өсөн һәм ҡоралланыуҙар өлкәһендә үҙҙәренең милитаристик пландарын, үҙҙәренең яңы һуғышты әҙерләү политикаһын яҡлау өсөн тағы ла бер һылтау өсөн кәрәк булғандыр.

Өс держава делегацияһы, «ҡоралланыуҙар кимәле» һәм «контроль» һәм бөтә илдәрҙең ҡоралланыуҙарын ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләләрҙе тикшереүгә ҡарата уларҙың тәҡдимдәре, йәнәһе, «киңерәк», һәм, шуға күрә, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһында совет тәҡдименән яҡшыраҡ, тип ышандыралар. Ләкин беҙ, өс делегацияның был тәҡдимен ҡабул иткән ваҡиғала ул бөтә эштең «ҡоралланыуҙар кимәле» һәм ҡоралды көстәр кимәленә «контроллек итеү» тураһындағы темаға буш һөйләнеүҙәргә генә ҡайтып ҡалыуын аңлатыр ине, тип күрһәткәйнек инде. Был, өс держава тәҡдиме ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуҙан ғөмүмән баш тартыу менән бер тигеҙ тигән һүҙ.

Ҡоралланыуҙар тураһындағы мәсьәлә буйынса өс делегация формулировкаһын совет делегацияһы бына шуға күрә лә дөрөҫ түгел, һәм ҡабул ителмәҫлек, тип иҫәпләй һәм тыныслыҡты һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте нығытыу интерестарына яуап биреүсе үҙе индергән тәҡдимдәрҙе яҡлай.

СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу өсөн кәрәкле саралар тураһындағы мәсьәләне сит ил эштәре министрҙәре Советы сессияһында тикшерергә беҙҙең кәңәшмәбеҙҙә ҡатнашыусыларҙың бөтәһенең әҙер булыуы айҡанлы, совет делегацияһы Атлантик пакт тураһындағы, һәм Англия, Норвегия, Исландияла һәм Европаның, Көнбайыш Европаның башҡа илдәрендә Американың хәрби базаларын төҙөү тураһындағы пунктты ла көн тәртибенә индерергә тәҡдим итте. Дүрт держава араһында мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу өсөн был мәсьәләне ҡарауҙың мөһим әһәмиәткә эйә булыуын бер генә аңлы кеше лә кире ҡаҡмаҫлыҡ.

Совет хөкүмәте бер нисә тапҡыр күрһәткәнсә, Атлантик пакт үҙенең осо менән Советтар Союзына һәм халыҡ-демократияһы илдәренә ҡаршы йүнәлтелгән. Ул Көнбайыш Европаны яңы һуғыш өсөн плацдармға әйләндереүҙе үҙенең маҡсаты итеп ҡуя. Ул тыныслыҡ һөйөүсе государстволарға ҡаршы заговор булып тора. Быны, айырым алғанда, Атлантик пакттың ойоштороусыларының Көнбайыш Германияның көнбайыш оккупацион державаларҙан бойондороҡло булыуын файҙаланырға, һәм һуңынан герман халҡын пушкалар ите сифатында яңы һуғышҡа ҡыуырға маташып, уны Төньяҡ атлантик группировкаға индереүҙәре лә күрһәтә.

Англияла, Норвегияла, Исландияла һәм Европаның, Көнсығыштың башҡа илдәрендә Американың хәрби базаларын төҙөү тураһында көнбайыш державаларҙың агрессив политикаһының нигеҙе булған мәсьәләнең Атлантик пакт менән туранан-тура бәйләнеүе лә, мөһим әһәмиәткә эйә булып тора.

АҠШ һәм Англияның күп кенә политик һәм хәрби деятелдәренең белдереүҙәре, айырым алғанда, ошо йылдың 19 апрелендә общиналар палатаһында Черчиллдең белдереүе был базаларҙың Советтар Союзына ҡаршы файҙаланыуы өсөн билдәләнелеүҙәрен күрһәтә. Был ошо базаларҙың географик яҡтан урынлаштырылыуынан да күренә.

Быңдай шарттарҙа Советтар Союзы, АҠШ, Великобритания һәм Франция араһында мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу, шулай уҡ Европалағы киҫергәнешле хәл сәбәптәрен һәм әҙәмтәләрен бөтөрөү тураһында нисек серьез итеп һөйләргә һәм шул уҡ ваҡытта күп кенә илдәрҙә Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне дүрт держава министрҙәренең тикшереүенә ҡуйыуҙан нисек баш тартырға мөмкин.

Өс держава позицияһының ялғанлығы шул тиклем күҙгә бәрелә, уларҙың вәкилдәре был совет тәҡдимен тикшереүҙән ғөмүмән ситләшеүҙе яҡшыраҡ тип таптылар. Ләкин өндәшмәй ҡалыу дәлил булып тормай бит. Ул был ваҡиғала көнбайыш державалар политикаһының әскәрлә булыуын тағы ла күберәк күрһәтә, бында уларҙың үҙҙәре өсөн күңелһеҙ теманы тикшереүҙән ситләшергә теләүҙәрен күрһәтә.

Был фекерҙәрҙән сығып, совет делега-

(Ҡушма Королевство, АҠШ, Франция):

Ҡоралланыуҙарҙың һәм ҡоралды көстәрҙең йәшәп килгән кимәленә халыҡ-ара контролдә урынлаштырыу һәм ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу өсөн СССР, Ҡушма Штаттар, Ҡушма Королевство һәм Франция тарафынан бирелгән тәҡдим ителәсәк сараларға ҡарата;

Йәшәп килгән договор йөкләмәләрен һәм килешеүҙәрҙе үтәүгә; һуғыш һәм агрессия ҡурҡынысын бөтөрөүгә ҡағылған мәсьәләләр.

Совет делегацияһы шулай уҡ, юғарыла күрһәтелгәнсә:

«Атлантик пакт һәм Англияла, Норвегияла, Исландияла һәм Европаның, Көнсығыштың башҡа илдәрендә Американың хәрби базаларын төҙөү» тиңыһы элекке көйөк уҡ Атлантик пакт һәм Америка базалары тураһындағы пунктты көн тәртибенә индереүҙе кәрәкле тип иҫәпләй.

Шул уҡ ваҡытта, беҙҙең кәңәшмә осраған ҡыйынлыҡтарҙы иҫәпкә алып, һәм көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшергә һәм сит ил эштәре министрҙәре Советен саҡырыу мөмкинлеген тәьмин итергә ынтылып, совет делегацияһы көн тәртибенең беренсе пунктының ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләгә ҡағылған өлөшөнең сит ил эштәре министрҙәре Советенә килешелмәгән килеш, ике формулировкала — совет редакцияһында һәм АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәренең редакцияһында тапшырылыуына риза. Совет делегацияһы, әлеккесә, Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләне, өс делегация тарафынан «А» вариантында эшләнгәнсә, был мәсьәлә буйынса беҙҙең арала килешелгән формулировканы беренсе пункттың килешелгән текстына индереп, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә алдынан ҡуйырға кәрәк, тип иҫәпләй. Был тәҡдимде индереп, совет делегацияһы, әлбиттә, министрҙәр Советенә шулай уҡ икенсе бер килешелмәгән пункт та — Атлантик пакт һәм Европаның, Көнсығыштың күп кенә илдәрендә Американың хәрби базаларын төҙөү турағындағы пункт та тапшырылыр, тигән фекерҙән сығып эш итә.

Шулай итеп, совет делегацияһы был ике килешелмәгән мәсьәләнең — ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу турағындағы һәм Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары турағындағы мәсьәләләрҙең министрҙәр Советенә тапшырылыуы менән ризалаша.

Был ваҡиғала беренсе пункт беҙҙең тарафтан түбәндәгесә итеп ҡабул ителәсәк һәм министрҙәр Советенә тапшырыласаҡ:

1. Европала йәшәгән халыҡ-ара киҫергәнешлек сәбәптәрен һәм әҙәмтәләрен һәм СССР, Ҡушма Штаттар, Ҡушма Королевство һәм Франция араһында мөнәсәбәттәрҙе ысынлап та оҙаҡ ваҡытҡа яҡшыртыу өсөн кәрәк булған сараларҙы тикшереү, түбәндәге мәсьәләләргә ҡарата булған мәсьәләләрҙе индерергә: Германияны демилитаризациялауға ҡарата;

(СССР):

СССР, Ҡушма Штаттар, Ҡушма Королевство һәм Францияның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу өсөн булған сараларға ҡарата, ҡоралланыуҙарҙың һәм ҡоралды көстәрҙең йәшәп килгән кимәленә һәм тейешле халыҡ-ара контроль урынлаштырыуға ҡарата;

ған килешелмәгән пункттарҙы ла көн тәртибенә индерергә тәҡдим итә.

Был мәсьәләләр буйынса килешеүгә өлгәшелгән шарттарҙа, совет делегацияһы Франция, АҠШ һәм Великобритания вәкилдәренең 2 майҙағы альтернатив тәҡдимдәренең «В» вариантында килтерелгән формулировкаларҙа көн тәртибенең башҡа пункттарын да ҡабул итергә әҙер. Ул ваҡытта инде «Германия берҙәмлеген аяҡҡа баҫтырыуға һәм тыныслыҡ договорын әҙерләүгә ҡағылған проблемалар» турағындағы пунктты, «Италия менән тыныслыҡ договорының Триестҡа ҡағылған өлөшө» турағындағы һәм «бойондороҡһоҙ һәм демократик Австрияны аяҡҡа баҫтырыу өсөн договорҙы тамамлау» турағындағы пункттарҙы, шулай уҡ «Италия, Румыния, Болгария һәм Венгрия менән тыныслыҡ договорҙарын һәм дүрт державаның Германияға һәм Австрияға ҡағылған килешеүҙәрен үтәү» турағындағы пунктты килешелгән, тип иҫәпләргә мөмкин буласаҡ.

Көн тәртибенең бөтә был пункттарының урынлашыу тәртибе турағындағы мәсьәләгә килгәндә, был мәсьәлә бер пункттан башҡа, өҫтәмә ҡарауҙы итә. Беренсе пунктҡа ҡарата бөтә делегациялар ҙа көн тәртибендә уның беренсе урынды алып торорға тейеш булыуы менән ризалашҡайнылар инде.

Беҙ, минең тарафтан әйтелгән совет тәҡдименең Великобритания, Франция һәм Ҡушма Штаттар вәкилдәре тарафынан ҡабул ителеүенә, шулай беҙҙең кәңәшмәбеҙҙең тиҙҙән үҙ эшен тамамлай алыуына һәм сит ил эштәре министрҙәре Советенең юғарыла әйтелгән мәсьәләләрҙе асылда ҡарау өсөн йыйылыуҙарына ышаныс белдерәбеҙ.

* * *

ПАРИЖ, 10 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының 10 майҙағы ултырышында СССР *вәкиле* Громыконан һуң Франция вәкиле Пароди сығыш яһаны. Советтар Союзы вәкиле тарафынан килтерелгән дәлилдәрҙе һәм фактарҙы кире ҡағырға көсөнән килмәгәс, ул уның сығышын «пропаганда» тип иғлан итте. Көнбайыш державаларҙың агрессив политикаһын аҡларға һәм яңы һуғышты әҙерләү буйынса үҙҙәре тарафынан үткәрелгән сараларҙы «мәжбүри» һәм «оборона» саралары итеп күрһәтергә уңышһыҙ маташып, Пароди СССР Ҡоралды Көстәре менән йәнәһе ҡоралланыуҙар кимәле буйынса Советтар Союзынан «артта ҡалыусы» өс держава ҡоралды көстәре араһындағы «ғәйәт ҙур диспропорция» турағындағы ялған раҫлауҙарҙы яңынан ҡабатланы. Пароди, әлбиттә, үҙ раҫлауҙарын нығытып, бер генә факт та килтермәне, сөнки тәбиғәттә быңдай фактар юҡ.

Көнбайыш державалар политикаһының йәнәһе «оборона» характерендә булыуына ҡарата ялған һөйләнеүҙәр Пародиға көн тәртибе буйынса СССР делегацияһы тарафынан 10 майҙа индерелгән яңы совет тәҡдимдәренә ҡаршы килеү өсөн һылтау табыу өсөн генә кәрәк булды. Үҙенең әҙерлек тәртибендә сығыш яһауы турағында әйтеп, Пароди Германияны демилитаризациялау турағындағы мәсьәләнең көн тәртибенең беренсе пунктында беренсе урында ҡуйылыуы менән, шулай уҡ Атлантик пакт һәм сит территорияларҙа Американың хәрби базалары турағындағы мәсьәләне килешелмәгән пункт сифатында министрҙәр Советенә тапшырыу өсөн көн тәртибенә индереү турағындағы тәҡдим менән ризалыҡ белдерҙе. Пароди совет тәҡдименең асылы буйынса һуңлабыраҡ сығыш яһау хоҡуҡын үҙенә ҡалдырҙы.

Германияны демилитаризациялау турағындағы пунктта килешеүгә ... килеүсе Великобритания вәкиле ... һәм агрессив Атлантик пактты «оборона» һәм «БМО Уставына ярашлы» пакт сифатында күрһәтергә уңышһыҙ маташыусы АҠШ вәкиле Джессеп тә ошондай рухта һөйләнеләр.

Гәрсә көнбайыш делегациялар ..., һәм, бөтәһенән элек, Америка вәкиле, кәңәшмә эшен ҡатмарландырырға тырыштылар, маташһалар ҙа, Джессеп үҙ сығышын йомғаҡлау өлөшөндә совет делегацияһына: «Дүрт министр кәңәшмәһен ... иле ҡатнашырға теләйме», тигән демагогик һорау бирҙе.

Ҡыҫҡаса йомғаҡлау һүҙендә Громыко Джессеп тарафынан бирелгән һорауҙың демагогик характерен фашланы һәм былай тине: «Совет делегацияһына бындай һорауҙың бер ниндәй нигеҙе юҡ, сөнки тап Совет хөкүмәте сит ил эштәре министрҙәре Советын саҡырыу тәҡдим иткәйне лә инде. Тағы ла, — тине бына совет делегацияһының, — Громыко, — АҠШ хөкүмәтенең дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре ... мәһен саҡырыуҙы ысынлап та ... шикләнеү өсөн бөтә нигеҙлектәре ... Беҙ был һорауҙы элек тә ҡуйғайныҡ, хәҙер ҙә ҡуябыҙ», тип өҫтәне Громыко.

Киләһе ултырыш 11 майҙа булды.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 10 май. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 10 майҙа, Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, бөтә фронтта актив һуғыш хәрәкәттәре алып барыуҙы дауам иттерәләр, тип хәбәр итте.

Һуңғы көндәрҙә фронтта айырыуса үҙгәрештәр булмаһы.

Фронттың айырым участкаларында Халыҡ армияһының частәре, дошман контратакаларын кире ҡағып, 1500-ҙән артығыраҡ дошман һалдатын һәм офицерҙарын юҡ иттеләр, яраланылар һәм пленға алдылар, шулай уҡ дошмандың бер самолетын атып төшерҙеләр.

В. И. Лениндең „Социализм һәм һуғыш" тигән хеҙмәтен Норвегияла баҫып сығарыу

ОСЛО, 10 май. (ТАСС). «Ню даг» издательствоһы В. И. Лениндең «Социализм һәм һуғыш» тигән хеҙмәтен норвег теленә тәржемә итеп баҫып сығарҙы.

Редактор F. F. ҒАФАРОВ.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Икенсе Государство заемы 1951 йылдың 29 апрелендә Павлодар ҡалаһында булған отоштарҙың 7-се тиражының

БЕЛЕШМӘ ТАБЛИЦАҺЫ

Отоштар заемдың бөтә 228 разрядендә серия һәм облигацияларҙың түбәндәге номерҙәренә сыҡты:

Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа	Серия номерҙәре	Облигация номерҙәре	Отош күләме һумдарҙа
020307	23*)	1 000	023987	1—50	200	028030	28*)	50 000	030674	1—50	500	034104	20*)	1 000	037254	1—50	500
020626	45*)	1 000	024521	16*)	1 000	028259	37*)	1 000	030990	27*)	1 000	034267	40*)	1 000	037657	31*)	1 000
020640	23*)	1 000	024748	44*)	1 000	028340	1—50	200	031024	13*)	10 000	034380	1—50	200	037782	20*)	1 000
020966	1—50	200	024846	34*)	1 000	028610	46*)	1 000	031290	23*)	10 000	034396	04*)	1 000	038082	36*)	1 000
021004	50*)	1 000	024878	12*)	1 000	028673	1—50	500	031331	12*)	1 000	034405	13*)	1 000	038169	1—50	500
021091	27*)	1 000	025038	1—50	500	028686	35*)	1 000	031561	47*)	1 000	034506	30*)	1 000	038268	30*)	1 000
021229	05*)	1 000	025075	33*)	1 000	028698	1—50	200	031685	25*)	1 000	034710	03*)	1 000	038272	1—50	200
021544	18*)	1 000	025288	14*)	1 000	028721	21*)	1 000	031725	22*)	1 000	034781	28*)	1 000	038277	11*)	1 000
021701	24*)	1 000	025301	1—50	200	028853	33*)	1 000	031876	1—50	500	034938	1—50	200	038288	46*)	1 000
021719	01*)	1 000	025321	1—50	200	029088	1—50	500	031888	48*)	1 000	034990	1—50	500	038300	46*)	1 000
021817	1—50	500	025455	24*)	1 000	029123	20*)	1 000	031918	1—50	500	035072	33*)	1 000	038334	34*)	1 000
021846	23*)	1 000	025528	1—50	500	029227	28*)	1 000	031965	02*)	1 000	035235	50*)	1 000	038421	1—50	500
021881	15*)	1 000	025714	31*)	5 000	029234	35*)	1 000	031980	47*)	1 000	035346	11*)	1 000	038539	15*)	1 000
022072	1—50	200	025844	1—50	200	029241	31*)	5 000	032048	1—50	200	035514	17*)	1 000	038560	1—50	500
022321	10*)	1 000	025910	1—50	200	029248	1—50	200	032113	15*)	1 000	035615	27*)	1 000	038604	02*)	1 000
022585	03*)	1 000	025962	45*)	5 000	029396	1—50	200	032183	1—50	500	035631	17*)	25 000	038895	34*)	1 000
022804	27*)	1 000	026080	16*)	1 000	029458	1—50	200	032460	45*)	1 000	035795	08*)	1 000	038952	47*)	1 000
022987	1—50	200	026108	43*)	10 000	029554	33*)	1 000	032621	1—50	500	035843	38*)	5 000	039063	44*)	25 000
022996	07*)	1 000	026323	1—50	200	029632	1—50	200	033102	23*)	1 000	036201	05*)	1 000	039149	1—50	500
023032	09*)	1 000	026763	11*)	1 000	029656	1—50	200	033128	38*)	1 000	036203	10*)	5 000	039253	38*)	1 000
023038	1—50	200	026939	02*)	1 000	029910	35*)	5 000	033218	24*)	1 000	036440	39*)	1 000	039287	1—50	200
023139	35*)	5 000	027097	29*)	1 000	029912	35*)	1 000	033257	1—50	500	036573	11*)	1 000	039347	1—25	200
023186	1—50	500	027166	1—50	200	029971	15*)	1 000	033344	28*)	1 000	036583	02*)	1 000	039392	1—50	500
023474	07*)	1 000	027458	1—50	200	030009	1—50	500	033430	01*)	1 000	036767	44*)	1 000	039413	14*)	10 000
023480	15*)	1 000	027465	19*)	5 000	030074	19*)	1 000	033544	1—50	200	036827	03*)	5 000	039414	15*)	1 000
023534	24*)	1 000	027475	16*)	1 000	030085	1—50	200	033686	1—50	200	036903	09*)	1 000	039455	19*)	1 000
023657	1—50	200	027803	15*)	1 000	030117	15*)	1 000	033932	40*)	1 000	036967	38*)	1 000	039529	27*)	1 000
023704	1—50	200	027813	37*)	1 000	030359	14*)	1 000	033962	1—50	200	037119	1—50	200	039860	1—50	500
023845	1—50	200	027900	33*)	5 000	030525	17*)	10 000	034076	32*)	1 000	037166	1—50	200			

*) Был сериялағы облигацияларҙың ҡалған 49 номерендә 200-әр һумлыҡ отош сыҡты.

Башҡорт АССР-ының Государство хеҙмәт һаҡлыҡ кассалары һәм госкредит Управлениеһы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01961 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы ...

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

Ҡыҙыл Башҡортостан

№ 93 (8810) 1951 йыл 13 МАЙ йәкшәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАСЫУ ЭШТӘРЕНДӘ БАРЛЫҠ ТРАКТОРҘАРҘЫ ЛА ТУЛЫ КЕҮӘТЕНДӘ ФАЙҘАЛАНЫРҒА, СМЕНА ҺӘМ КӨНДӘЛЕК НОРМАЛАРҘЫҢ АРТТЫРЫЛЫП ҮТӘЛЕҮЕН ТӘЬМИН ИТЕРГӘ! (1-се бит).

Ш. Сәитов. — Тракторҙар паркын насар файҙаланалар (1-се бит).

М. Арсланов. — Күсмә Ҡыҙыл Байраҡ беҙҙең колхозда (1-се бит).

ЯҢЫ ЗАЕМДЫҢ УҢЫШЫ (1-се бит).

ВОЛГА—ДОН КАНАЛЫ — БӨТӘ ХАЛЫҠ ТӨҘӨЛӨШӨ

Хәсән Яхьялетдинов. — Беҙ тыныслыҡ өсөн көрәшәбеҙ (2-се бит).

Мөхәммәт Дивеев. — Гигант ҡоролма төҙөүҙә (2-се бит).

Сталинсе төҙөлөшкә бөтә халыҡ ярҙамы (2-се бит).

Ростам Таканаев. — Донда һуғарыу ҡоролмаларының ҙур төҙөлөшө (3-сө бит).

Е. Федоров. — Өфө хеҙмәтсәндәре беҙҙең шишмәләрҙе аҡлайҙар (3-сө бит).

Михаил Митрошин. — Мине Башҡортостан үстерҙе (3-сө бит).

Екатерина Кацель. — Төҙөлөшкә килегеҙ, ҡыҙҙар! (3-сө бит).

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ. Ғ. Ибраһимов. — Халыҡ һуҙышы (3-сө бит).

ХАЛЫҠ-АРА КҮҘӘТЕҮ (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Шахмат буйынса донъяла беренселек өсөн (4-се бит).

Хеҙмәтсәндәрҙең һаулығы тураһында бөйөк хәстәрлек

Хеҙмәтсәндәр өсөн ял йорттары ойоштороу тураһындағы декретка бөйөк Ленин тарафынан ҡул ҡуйылыуға бөгөн 30 йыл тулды. Был, Совет властенең кеше тураһында ленинсе-сталинсе хәстәрлекте ҡаулаландырған тәүге декреттәренән береһе ине. Хеҙмәтсәндәрҙең һаулыҡтары тураһындағы был хәстәрлек СССР-ҙың Сталинсе Конституцияһында үҙенең артабанғы ап-асыҡ ҡәүҙәләнешен тапты. Совет власе, бөйөк Лениндең күрһәтмәләрен тормошҡа ашырып, хеҙмәтсәндәр өсөн санаторийҙарҙың, ял йорттарының, клубтарҙың киң селтәрен булдырҙы.

Большевиктар партияһының бөтә геройик көрәше һәр бер совет кешеһенең тормошон шатлыҡлы һәм бәхетле итергә йүнәлтелгән. Һуңғы йылдарҙа аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына ваҡлап һатыу хаҡтарын дүрт тапҡыр арзанайтыу арҡаһында илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре 300 миллиард һум отош алдылар. Ошо уҡ йылдар эсендә беҙҙә меңдәрсә санаторийҙар, ял йорттары, клубтар һәм башҡа культура-ағартыу учреждениелары төҙөлдө. Унан тыш илебеҙҙең граждандары социаль страхование буйынса, социаль тәьминәт буйынса государствонан бик күп средство алалар. Санаторийҙарға һәм ял йорттарына хеҙмәтсәндәр өсөн льготалы шарттарҙа түләүһеҙ путевкалар бирелә. Беҙҙә бөтә эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр государство иҫәбенән түләнә торған путевкалар менән файҙаланалар. Үҙған йыл государство иҫәбенән булған был түләүҙәр һәм льготалар 120 миллиард һумдан уҙып китте.

Былар бөтәһе лә социализмдең капитализмға ҡарағанда ҙур өҫтөнлөктәрен асыҡ сағылдырыусы факттар.

Ә капитализм, әгәр ҙә 1914 йылдан алып иҫәпләгәндә лә, һуңғы 37 йыл эсендә кешелек донъяһына нәмә бирә алды һуң? Ундарса миллион кешеләрҙе үлтергән һәм ғәрипләткән ике бөтә донъя һуғышын, күп тиҫтәләрсә миллион эшселәрҙе аслыҡҡа, бөлгөнлөккә, үлемгә дусар иткән бер нисә бөтә донъя экономик кризис бирҙе. Лондонда хәҙер 200 меңдән артыҡ эшсе семьяһының йәшәргә урыны ла юҡ. Һуңғы йылдарҙа Америкала йәшәүсе семьяларҙың 70 проценте ас-тупаҡ ҡына «ғүмер итә». Ә шул уҡ ваҡытта һуғыш бюджеты үҫә бара, хеҙмәтсәндәргә ауыр налогтар һалына. Мәҫәлән, Америка бюджетенен 140 миллиард доллары йәки 70 проценте һуғыш хәрәжәттәре әҙерләүгә китә һәм бер ярым проценте генә һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф эшенә тотола.

Ә беҙҙә, еңгән социализм илендә, кеше тигән һүҙ, ғәйәт ҙур ғорурлыҡ менән әйтелә. Донъялағы иң ҡиммәтле капитал тип атаны кешеләрҙе бөйөк Сталин.

Туғанлаш социалистик милләттәр халыҡтары семьяһында сәскә атыусы Совет Башҡортостаны йәшәгән кешеләр тураһында сталинсе хәстәрлектең айырыуса үҙәл миҫалдарын күрергә мөмкин. Совет власы йылдарында мең ярымдан артыҡ дауалау пункттары төҙөлдө. Уларҙың байтаҡ өлөшө Башҡортостандың алыҫ райондарында төҙөлдөләр. Хәҙер республикала ике меңдән врач һәм алты меңдән артыҡ медицина персоналы эшләй. Больницаларҙағы койкалар һаны, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 40 процентҡа тиң әйтерлек артты.

Башҡортостандың Совет власы йылдарында төҙөлгән курорттары, санаторийҙары һәм ял йорттары бөтә Советтар Союзына билдәле. Бында ял итергә, дауаланырға Советтар Союзының бөтә мөйөштәренән киләләр. Үҙған йыл тик ВЦСПС-ҡа ҡараған санаторийҙарҙа һәм ял йорттарында ғына ла 13 меңдән кеше ял итте.

Республиканың Чехов һәм Аксаков исемендәге санаторийҙары һәм Шафран курорты айырыуса ҙур популярлыҡ менән файҙаланыла. Был санаторийҙарҙа эффектлы дауалау средстволарынан иҫәпләнгән башҡорт ҡымыҙы йыл әйләнәһенә була. Улар инде хәҙер элекке кеүек, тик коммерция маҡсаттарында ғына эш итеүсе шәхси кешеләр ҡулындағы ярым кустар һәм ташландыҡ хәлдә түгелдәр. Уларҙа хәҙер иң яңы препараттар һәм медикаменттар бар. Юғары квалификациялы медицина кадрҙары менән тәьмин ителгәндәр. Дауалауҙа иң алдынғы методтар ҡулланыла. Үҙған йыл тик был ике санаторийҙа генә лә 2100 кеше ял итте һәм дауаланды. Унан тыш министерстволар һәм предприятиелар ҡарамағындағы хәрәкәт итеп килеүсе ундарса ял йорттары эшләй. Ундай ял йорттарында йыл һайын меңдәрсә нефтселәр, металлургтар һәм башҡа профессиялағы эшселәр ял итәләр.

Бөйөк Ленин декреты менән төҙөлгән Өфө ял йорто 28 йыл йәшәп килә. Унда тик бер үҙған йылда ғына ла хеҙмәтсәндәрҙән 7 мең кеше ял итте. Ленин декретына 30 йыл тулыу айҡанлы Өфө ял йортона ВЦСПС-тың почет грамотаһы тапшырылды.

Тиҙҙән республикабыҙҙың санаторийҙарында, ял йорттарында йәйге сезон башлана. Быйыл республика һаулыҡ һаҡлау министерствоһына ҡараған Янған тау, Пөмәтау һәм Красноусол санаторийҙарында генә лә 5 меңдән артыҡ кеше ял итәсәк. Ә Пөмәтау санаторийында күкерт һәм водород ванналары эшләйәсәк. Хәҙер улар инде ял итеүселәрҙе ҡабул итергә һәм дауалауға тулыһынса әҙер.

Материаль көн-күрештәренең һәм культура кимәлдәренең өҙлөкһөҙ күтәрелеше нигеҙендә фиҙакәр һәм ижади хеҙмәт яткәнлығын совет кешеләре бик яҡшы беләләр. Тимәк, хеҙмәтсәндәрҙең материаль һәм культура күтәрелешендәге артабанғы уңыштары хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыуға, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыуға, промышленноста һәм ауыл хужалығында сифат күрһәткестәрен яҡшыртыуға бик ныҡ бәйләнгән. Шуға күрә социалистик Тыуған илебеҙҙең миллионлаған совет кешеләренең тыныс хеҙмәте халыҡтарҙың тормош кимәлдәрен күтәреү өсөн көрәштә ҙур вклад булып тора ла.

Партия, совет һәм профсоюз ойошмаларының, шулай уҡ һаулыҡ һаҡлау органдарының бурысы, хеҙмәтсәндәрҙең йәйге ял итеүҙәрен өлгәлә ойоштороуҙы тәьмин итеүҙән тора. Быны өсөн бигерәк тә республикалағы санаторий һәм ял йорттарының киң селтәрен тулыһынса файҙаланырға кәрәк.

ЯҘҒЫ КУЛЬТУРАЛАР СӘСЕҮҘЕ ТАМАМЛАНЫЛАР

АҠЪЯР. (Телеграф аша). Хәйбулла районы колхоздары яҙғы культуралар сәсеүҙең государство планын 10 майға үтәнеләр. Бөтәһе 34236 гектар ашлыҡ сәселде, план 104 процентҡа үтәлде. Төп аҙыҡ культураһы булған бойҙай 22100 гектар майҙанда сәселде.

ВКП(б)-ның Хәйбулла райкомы секретары **Ә. ХӘСӘНОВ,**

Район Советы исполкомы председателе **Л. ТАҺИРОВ,**

Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире **В. ШАПОШНИКОВ.**

Хеҙмәтсәндәрҙең ял йорттары тураһында ленинсе декреттең утыҙ йыллығына ҡарата

Себерҙең һауыҡтырыу йорттары

НОВОСИБИРСК, 11 май. (ТАСС). Совет власы йылдарында Себер территорияһында ял йорттарының һәм санаторийҙарҙың ҙур селтәре төҙөлдө. Уларҙың күбеһе профсоюздар средстволары иҫәбенә төҙөлдө һәм тотола.

Карачи күлендәге курорт бөтә илгә билдәле. Ул бынан ярты быуат элек төҙөлгән, ләкин уның тәбиғи байлыҡтары тик Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына файҙаланыла башланы. Сталинсе биш йыллыҡтар йылдарында дауаланыу күле ярҙарында ҙур төҙөлөш йәйелдерелде. Хәҙер дауаланыу өсөн таштан эшләнгән корпус, төрлө һәм ярамлы биналар төҙөлдө. Курорттың үҙ электр станцияһы бар. Һуңғы ваҡытта курортта йылына 3 меңдән алып 5 меңгә тиклем кеше дауалана.

Шулай уҡ Аҡкүштар күле курорты, Бармаулағы дөйөм терапия санаторийе һәм башҡалар шулай уҡ киң билдәлеләр.

Кузбасс шахтерҙары, Сталинск металлургтары, Кемерово химиктары, Алтай игенселәре, Томск өлкәһенең ағас ҡырҡыусылары, Новосибирсктың машиналар төҙөүселәре үҙҙәренең ялдарын Себерҙең матур мөйөштәрендә урынлашҡан ял йорттарында үткәрәләр. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта Себер ял йорттарында 100 меңдән артығыраҡ хеҙмәтсән ял итте.

Профсоюз ойошмалары 1946 йылдан 1950 йылға тиклем һауыҡтырыу учреждениеларының селтәрен киңәйтеүгә ҙур средстволар һалдылар. Йәшәп килгән һауыҡтырыу йорттарын капиталь ремонтлауға һәм яңыларын төҙөүгә 18 миллион һумдан артығыраҡ аҡса тотолдо. Медицина оборудованиеһы һәм төрлө инвентарҙар менән байыҡтырыуға 10 миллион һумдан артығыраҡ аҡса тотолдо.

БАСЫУ ЭШТӘРЕНДӘ БАРЛЫҠ ТРАКТОРҘАРҘЫ ЛА ТУЛЫ КЕҮӘТЕНДӘ ФАЙҘАЛАНЫРҒА, СМЕНА ҺӘМ КӨНДӘЛЕК НОРМАЛАРҘЫҢ АРТТЫРЫЛЫП ҮТӘЛЕҮЕН ТӘЬМИН ИТЕРГӘ!

Тракторҙар паркын насар файҙаланалар

Бөзәнә. (Телефон аша). Райондың колхоздарында яҙғы басыу эштәре башланыуға бер айҙан артыҡ ваҡыт үтте. Райондың МТС-тарында булған бай техниканы һәм колхоздарҙың үҙҙәренең резервтарын тулыһынса файҙаланғанда сәсеүҙе күптән үк тамамларға мөмкин ине инде.

Ләкин МТС етәкселәренең машиналар паркын файҙаланыуға яуаплыһыҙ ҡараштары колхоздар менән төҙөшкән договорҙың өҙөлөүенә, басыу эштәренең сиктән тыш оҙаҡҡа һуҙылыуына килтерҙе.

Подлуб МТС-ында тракторҙар паркын файҙаланыу бигерәк тә насар ойошторолған. МТС ошо көнгә тиклем яҙғы басыу эштәренең бер генә төрө буйынса ла колхоздар менән төҙөшкән договорҙы үтәй алғаны юҡ.

Хатта МТС етәкселәре үҙҙәренең йәнәшәһендә генә булған «Колос» колхозында ла тракторҙар паркының тулы кеүәтендә эшләүен тәьмин итмәйҙәр. Колхоз менән төҙөшкән договор нигеҙендә бында тракторҙар менән 1300 гектар майҙанда сәсеү үткәрелергә, 850 гектар ер һөрөлөргә тейеш ине. Ләкин бында 6 трактор менән ни бары 500 гектар майҙанда сәсеү үткәрелде һәм 230 гектар ер һөрөлдө. Сөнки тракторҙар эшләүгә ҡарағанда күберәк ватылып, эшләмәй торалар.

«Октябрь» колхозын да ошо уҡ МТС-тың 6 тракторы хеҙмәтләндерә. Бында ла тракторҙар бик насар файҙаланылалар. Шартлы һәр бер тракторға смена нормаһы 21 процентҡа ғына үтәлә. Трактор бригадаһы бригадиры Егор Шилин үҙенә тапшырылған эшкә сиктән тыш яуаплыһыҙ ҡарай. Ул трактористар араһында машиналарҙы һаҡлыҡ менән йөрөтөү һәм тулы кеүәтендә файҙаланыу өсөн социалистик ярыш ойоштормай. Шуға күрә был бригада һуңғы биш көнлөктә басыу эштәрендә бер ниндәй ҙә үҫеш бирмәне.

«Правда» колхозында ла 7 трактордың көн һайын өсөһө-дүртеһе ватыҡ хәлдә тора. Иптәш Уразбахтин етәкселек иткән бригадала дизель тракторы биш көндән бирле инде эшләмәй. Тракторист Ғиниәт һәм Әнғәм Аҡбашевтарҙың машиналарҙы теләһә нисек һаҡһыҙ йөрөтөүҙәре һөҙөмтәһендә уның подшипнигы эреген. Механизаторҙар ярҙам һорап МТС етәкселәренә мөрәжәғәт итәләр. 7 майҙа МТС-тың күсмә мастерскойы колхозға килә. Ләкин бригадаға бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтмәйенсә, кисенсә колхозға китте. Колхоз етәкселәренең талабы буйынса күсмә мастерской өс көндән һуң тағы килде, ләкин тракторҙарға ремонт үткәреү өсөн кәрәкле частар булмағанлыҡтан тракторҙарҙың айырым частарын МТС-ҡа алып китергә мәжбүр булды. Бына хәҙер бер аҙна ваҡыт үтте инде. Ә был трактор эшкә башлай алғаны юҡ әле. Ҡалған өс трактор ҙа шулай уҡ насар файҙаланыла. Бишенсе майҙан 8 майға тиклем өс трактор менән ни бары 14 гектар ер һөрөлгән.

Подлуб МТС-ы етәкселәренең тракторҙар ремонтлауҙа һаҙ артынан ҡыуып, уның сифатына иғтибар бирмәүҙәре хәҙер государство өсөн дә, шулай уҡ колхоздар өсөн дә бик ҡиммәткә төшә. Мәҫәлән, МТС етәкселәре «Правда» колхозына ремонтланмаған тракторҙарҙы ебәргәндәр. Шуға күрә бында өс машина бөтөнләй тип әйтерлек хәрәкәтһеҙ тора. Ә колхоздың әле 400 гектарҙан артыҡ бойҙай һәм һоло культуралары сәсәһе бар.

Агротехниканы тупаҫ боҙоуға юл ҡуйыла. Жданов исемендәге колхозда бер генә тракторис тә предплужникте файҙаланмай. Трактор бригадаһы бригадиры иптәш Бикметов бик тыныс ҡына:

— Предплужникле һабандар менән һөрөү яғыулыҡты артыҡ тотоноуға килтерә, — тип трактористарҙың был эштәрен хатта үҙе үк хуплай.

«Всходы коммуны» колхозында трактористар 5 гектар майҙанда ерҙе 16—17 сантиметр тәрәнлектә генә һөргәндәр. Ләкин колхоз председателе иптәш Канбеков, трактор бригадаһының был эшен бракҡа сығарып, уны ҡабаттан эшләтәһе урынына, бер һүҙһеҙ ҡабул итә.

Подлуб МТС-ының директоры Орехов, өлкән агрономы Черимазов иптәштәр трактор бригадаларынан яҙғы басыу эштәрен колхоздар менән төҙөшкән договорҙа күрһәтелгән сроктарҙа үтәлеүен талап итмәйҙәр. Уларҙың эштәрендә практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. МТС-тың өс күсмә мастерскойы бар. Ләкин МТС-тың өлкән механигы иптәш Шабалов уларҙың эшен трактор бригадаларына үҙ ваҡытында тейешле практик ярҙам күрһәтерлек итеп ойоштормаған. Улар етерлек запас частар, инструменттар менән тәьмин ителмәгәндәр.

Тракторҙар паркының һәм эске резервтарҙың бына шулай насар файҙаланылыуы һөҙөмтәһендә район басыу эштәрендә бик ныҡ артта ҡала. Район 10 майға сәсеү планын ни бары 66,8 процентҡа үтәне. Һуңғы биш көнлөктә ни бары 8,5 процент үҫеш бирҙе.

Район партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарынан был хурлыҡлы артта ҡалыуҙы бөтөрөү, ошо көндәр эсендә һәр бер колхоздың сәсеү планын үтәүенә өлгәшеү өсөн конкрет саралар күреү талап ителә.

Ш. Сәитов.

Күсмә Ҡыҙыл Байраҡ беҙҙең колхозда

Беҙҙең Карл Маркс исемендәге колхоздың бөтә яҙғы сәсеү майҙаны 1100 гектарға етә. Ошо иҫәптән 895 гектар бөртөклө культуралар сәсергә тейеш инек.

Туңға һөрөп ҡалдырылған ерҙәр аҙ булғанлыҡтан, яҙ ерҙең күпселек өлөшөн һөрөп сәсергә тура килде. Шуға күрә беҙ сәсеүгә әҙерлек осоронда ауыл хужалығы инвентарҙарына ремонт үткәреү менән бер рәттән, йәнле тартыу көстәрен әҙерләүгә лә ҙур иғтибар бирҙек. Был, басыу эштәре башланыуҙың беренсе көндәренән үк матур һөҙөмтәләр бирҙе. Һабансыларҙан Мөхлисов, Әхмәтов иптәштәр көн һайын һөрөү нормаһын арттырып үтәйләр. Исмәғил Шәйхов, Әдип Йәрмиев, Рәдип Нуретдинов һәм башҡа иптәштәр 5—5,5 гектар ер тырматтылар. Сәсеүселәр ҙә уларҙан ҡалышманы. Ф. Зарәев, В. Фәйзов, С. Сәғитьянов, К. Фазылов һәм башҡа иптәштәр сменаға 5—6 гектар ашлыҡ сәстеләр.

Колхоздың эреләтелеүе басыуҙарҙа механизацияны тулы файҙаланыу өсөн ҙур мөмкинлектәр асты. Беҙ МТС менән төҙөлгән договор нигеҙендә тағылма инвентарҙарҙы үҙ ваҡытында ремонтланыҡ. Етерлек тиклем яғыулыҡ һәм майлау материалдары ташыныҡ. Трактор бригадаһына эш һөйөүсе тәжрибәле колхозсыларҙы беркеттек. Былар тракторҙарҙы тулы кеүәтендә, сәғәт графигы нигеҙендә файҙаланыуға мөмкинлек бирҙе. Беҙҙә 4 трактор эшләй. Трактористарға вагончиктар йыһазландырылды. Ошо шарттарҙа эшләп, иптәш Фазыл Нибаев етәкселегендәге трактор бригадаһы трактористары көндөҙгө һәм төнгө смена нормаларын 140—145 процентҡа үтәйләр.

Иртә культураларҙы сәсеү беҙҙә 6—7 эш көнөндә тамамланды. Эштең сифаты яҡшы булды.

Яҙғы сәсеү менән бер үк ваҡытта, колхоздың башҡа тармаҡтарында ла эш туҡталманы. Бер мең кубометр утын әҙерләнде. Төҙөү бригадаһы төҙөлөш материалдары әҙерләне һәм уларҙы ташыны. Болонлоҡтарҙы таҙартыу, колхоздарҙы электрләштереү буйынса ла байтаҡ эштәр башҡарылды.

Яҙғы басыу эштәрен үҙ ваҡытында һәм юғары агротехник кимәлдә үтәп сыҡҡан өсөн ВКП(б) райкомы һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы беҙҙең колхозға тапшырылды.

М. Арсланов,

Балтач районы Карл Маркс исемендәге колхоз председателе.

Чапаев исемендәге колхозда

Ҡырмыҫҡалы районы колхоздары яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа сроктарҙа һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү буйынса үҙ-ара ярышалар. Был ярышта Чапаев исемендәге колхоз (председателе иптәш Заһретдинов) алда бара. Колхоз иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы. 26 апрелгә тиклем үк 1300 гектар ашлыҡ сәселде, 1600 гектар ер тырматылды, 350 гектар ер һөрөлдө.

Коммунист иптәш Сабир Шамбазов етәкселек иткән басыусылыҡ бригадаһы иртә культуралар сәсеү планын колхозда беренсе булып үтәп сыҡты. Сәскестәрҙә эшләүселәрҙән Мәүләтбай Ғирфанов, Нурулла Насиров һәм Виктор Ширяев иптәштәр көн һайын 2—3 норма эшләнеләр.

Ҡырмыҫҡалы МТС-ының был колхозды хеҙмәтләндергән трактор бригадаһы (бригадиры иптәш Мангул) договор йөкләмәләрен уңышлы башҡара. Трактористарҙан Григорий Ефремов, Дмитрий Николаев иптәштәр көндөҙ сәсәләр, ә төндәрен ер һөрәләр. Улар смена нормаларын 180 — 190 процентҡа үтәйҙәр.

Яҙғы сәсеүҙә эш сифаты яҡшы. Был эштә колхоз агротехнигы иптәш Әхмәров ҙур тырышлыҡ күрһәтә.

Район колхоздары араһында ойошторолған социалистик ярышта еңгәне өсөн Чапаев исемендәге колхозға район Советы исполкомының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды.

ВЦСПС-тың Өфө ял йортонда.

Һүрәттә: уңда — Өфө паровоздар ремонтлау заводының йыйыу цехы начальнигы ял итеүсе П. Переведенцев үҙенең ҡатыны менән.

А. Червинский фотоһы.

Бөтә халыҡ төҙөлөшө

Совет хөкүмәте үҙ йәшәүенең тәүге көндәренән үк Волга — Дон каналын төҙөүгә ҙур әһәмиәт бирҙе. Граждандар һуғышының ауыр осоронда әле иптәш Сталин «Волга менән Донда кадеттарҙы батырғас та каналды ҡаҙырбыҙ», тигәйне. Һәм уны төҙөү башланды. Ләкин немец-фашист ғәскәрҙәренең беҙҙең илгә баҫып инеүҙәре уның төҙөлөшөн ваҡытлыса туҡтатып торҙо.

Волга — Дон каналы илебеҙҙең халыҡ хужалығында иҫ киткес ҙур урын тота. Уны төҙөп бөтөү менән биш диңгеҙҙе тоташтырыу проблемаһы тулы комплекса менән хәл ителәсәк. Һөйөклө Мәскәү Азов һәм Ҡара диңгеҙҙәрҙең дә эске портына әйләнер. Бынан тыш, Волга—Дон төҙөлөшө ҡоролоҡло ерҙәрҙе һуғарыуҙа, халыҡ хужалығын арзан электр энергияһы менән тәьмин итеүҙә иҫ киткес ҙур әһәмиәткә эйә. Волга—Дон нигеҙҙә быйыл төҙөлөп бөтәсәк. 1952 йылдың яҙында сталинсе эпоханың яңы каналында навигация флагы күтәрелер.

Коммунизмдең беренсе булып сафҡа баҫасаҡ был бөйөк төҙөлөшө Тыуған илебеҙ халҡының ярҙамында, ҡатнашлығында төҙөлә. Ул — бөтә халыҡ төҙөлөшө. Төҙөлөштең срогын ике йылға ҡыҫҡартыу тураһындағы ҡарарҙы совет халҡы тыныслыҡ өсөн барған көрәш итеп, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙағы ҙур һөжүм кеүек итеп ҡаршы алды.

Төҙөлөштә бөтә өлкәләрҙән, край һәм республикаларҙан, геройҙар ҡалаһы Сталинградтан килгән эшселәр, инженер-техник работниктар, механизаторҙар, экскаваторщиктар эшләйҙәр. Украинец һәм белорустар ҙа, грузин һәм әрмәндәр ҙә, башҡорт һәм татарҙар ҙа бар унда. Совет Башҡортостаны гүзәл Уралдың батыр улдарын, уңған ҡыҙҙарын тыныслыҡ төҙөлөшөнә оҙатты. Төрлө милләт вәкилдәре бөйөк рус халҡының туғандарса ярҙамы арҡаһында гүзәл хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр, коммунизм төҙөйҙәр.

Газетабыҙҙың бөгөнгө номерында урынлаштырылған материалдарҙа Волга—Дон каналы төҙөүселәре республика заводтары етештергән оборудованиеларҙың эше тураһында һөйләйҙәр. Улар шулай уҡ дуҫтарса тәҡдим яһайҙар, кәңәш бирәләр. Был республика хеҙмәтсәндәрен яңы еңеүҙәргә рухландырырға, үҙ эштәрендә ҙур яуаплылыҡ тыуҙырырға тейеш.

Предприятиеларҙың яҡшы эшләүе, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, продукцияның сифатын яҡшыртыу, материалдарға экономия яһау, государство һумын дөрөҫ файҙаланыу кеүек бөтә саралар Сталинсе төҙөлөштәргә күрһәтелгән ҙур ярҙам булып тора. Бөтә эшселәр шуға ынтылырға, ә партия, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының эше шул көрәште ойоштороуға йүнәлтелергә тейеш.

ЯҢЫ ЗАЕМДЫҢ УҢЫШЫ

Республикабыҙ ҡалаларында һәм ауылдарында яңы заемдың уңышлы урынлаштырылыуы тураһында урындарҙан күп мәғлүмәттәр килеүҙә дауам итә.

Заем урынлаштырыу буйынса Ишембай ҡалаһы республика күләмендә беренсе урынды алып килә. Өфө, Черниковск, Белорет, Октябрьский ҡалаларының хеҙмәтсәндәре лә яңы заемға яҙылыуҙа ҙур әүҙемлек һәм берҙәмлек күрһәтәләр.

Колхоз крәҫтиәндәре подписка суммаларын аҡсалата индереү темпын көндән-көн арттыра баралар. Баймаҡ районы колхозсылары подписка суммаһының 87 процентын, Бөрйән—57, Бөзәнә — 55,4 Саҡмағош—50 процентын индерҙеләр. Маҡар, Хәйбулла, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Шишмә, Бишбүләк, Дүртөйлө райондарында ла подписка суммаларын срогынан алда индереү эше киң йәйелдерелдә.

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә

Шаран. Райондың колхозсылары һәм ауыл хужалығы механизаторҙары араһында яңы заемға яҙылыу ҙур күтәренкелек менән бара. Күпселек колхозсылар заемға яҙылыу менән бергә взностарын да шунда уҡ индерәләр. Крупская исемендәге колхоз члены Дмитрий Иванович Локтев иң беренсе булып 700 һумға яҙылды, подписка суммаһын шунда уҡ түләне.

— Мин, — тине ул, — был хеҙмәт аҡсамды тыныслыҡ өсөн, коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре өсөн бирәм.

Иптәш Локтевтың фекерен колхозсылар ҡайнар ҡаршыланылар. Пөҙәрләгән колхозсылар заемға берҙәм яҙылып, үҙҙәренең подписка суммаларын 15 майға тиклем тулыһынса индереп бөтөрөргә булдылар.

Еркәле ауыл Советында заемға яҙылыу айырыуса яҡшы бара. Колхозсылар подписка суммаларын срогынан алда индерәләр.

И. Абдуллин

Волга—Дон каналы

Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре! Волгала һәм Днепрҙа, Донда һәм Аму-Дарьяла бөйөк төҙөлөштәрҙе тормошҡа ашырып, коммунизм төҙөү эшенә яңы вклад индерәйек!

(ВКП(б) Үҙәк Комитетенең 1951 йыл 1 Май саҡырыуҙарынан).

Беҙ тыныслыҡ өсөн көрәшәбеҙ

Атлаусы ҙур экскаватор экипажының бөтә ағзалары ла Бөйөк Ватан һуғышының актив ҡатнашсылары. Бөтәбеҙ ҙә Тыуған ил азатлығы, халыҡ бәхете өсөн көрәштек. Хәҙер ҙә бөтә совет халҡы кеүек тыныслыҡ өсөн көрәшәбеҙ. [illegible]

Беҙҙең экскаватор — иң яңы конструкциялы машина. [illegible]

Уның экипажында эшләүселәр [illegible] Коллективтың етәксеһе Анатолий Павлович Усков — Сталинград кешеһе. [illegible]

Мин коллективҡа килгәндә, экскаватор [illegible]

Атлаусы ҙур экскаватор ҡатмарлы эш башҡара. [illegible]

Был ҡатмарлы процесстарҙы беҙҙең экскаваторҙарҙы [illegible]

Ер ҡаҙыусы был гигант заводты [illegible]

Тыуған илебеҙҙең заводтары был бөйөк төҙөлөштә беҙҙең экскаваторҙар кеүек бик күп механизмдар менән тәьмин итә. [illegible]

Хәсән Ямалетдинов,

атлаусы ҙур экскаватор экипажы начальнигенең урынбаҫары.

Гигант ҡоролма төҙөүҙә

Дон гидротехник узелы судноларҙы йөрөтөүсе Волга—Дон каналының [illegible] урынлашҡан. Был районда 13-сө номерлы шлюз, насос станциялары, плотина, канал төҙөлә.

Беҙҙең төҙөлөш районы, башҡалар кеүек үк, [illegible]

Беҙҙең ҡеүәтле скреперҙәр ҙә шундай уҡ ике төрлө эште башҡаралар. Уларҙың ҙур бункерҙарына 10 — 14 кубометр ер һыя. Скреперҙәр ерҙе канал эсенән ала-[illegible]

[illegible] тә башҡарылған кеүек, уларҙы ташыуҙа ла ҡеүәтле самосвалдар, бетон насостары, портал крандары эшләтелә. Һәр насос конструкцияға сәғәт һайын 20 кубометр бетон бирә ала.

[illegible] лар бында күп. Беҙ бөтәбеҙ ҙә үҙ яҡташтарыбыҙҙың ышаныуын, даның намыҫ менән аҡлау өсөн көсөбеҙҙе аямайынса көрәшәбеҙ.

Мөхәммәт Диваев,

ҡоролманың баш инженеры.

Халыҡтар дуҫлығының бөйөк һәйкәле

Волга—Дон төҙөлөшөнә бөтә совет халҡының ҡатнашлығында төҙөлә. Һәр республиканан, һәр өлкәнән килгән төрлө милләттәге кешеләр эшләй бында. Улар ҡатмарлы механизмдар менән идара итәләр, төҙөлештә хеҙмәтләндерәләр, айырым эш участкаларына етәкселек итәләр, бөйөк рус халҡының туғандарса ярҙам итеүе арҡаһында, коммунизм төҙөлөшөндә ҡатнашырлыҡ булып үҫтеләр. Улар бәхетле тормош төҙөйҙәр, яңы гиганттар һалалар, бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәшәләр.

Беҙҙең төҙөлөштә бөтә өлкәләрҙән килгән рустар ҙа, украинецтар ҙа, ҡояшлы Грузия кешеләре лә, Урал тауҙарынан килгән башҡорттар һәм Волга буйҙарынан килгән татарҙар ҙа бар. Бөтә халыҡ ҡатнаша бында. Мин үҙем дә мордвин. Башҡалар менән бергә тыныслыҡ көрәшселәре — коммунизм төҙөүселәр сафында барам.

Совет Башҡортостанынан да беҙгә бик күп механиктар, инженерҙар, гидротехниктар, экскаваторщиктар, шоферҙар һәм тракторсылар килделәр. Уралдың улдарын һәм ҡыҙҙарын һәр төрлө эштә күреп була. Улар коммунизмдың бөйөк һыу магистрален төҙөүҙә фиҙакәр хеҙмәт итәләр.

Бөтә халыҡ көсө менән төҙөлгән коммунизм төҙөлөшө халыҡтар дуҫлығының бөйөк һәйкәле булып балҡыр.

А. Дорофеев,

Волга—Дон төҙөлөшөнөң производство бүлеге начальнигенең урынбаҫары.

Был — булыр!

Совет государстволарының нигеҙе һалыусылары Ленин һәм Сталин судноларҙы йөрөтөүсе Волга—Дон каналын төҙөү [illegible] бирерҙәр. Һәм канал сталинсе биш йыллыҡтар осоронда төҙөлә башланы.

Волга—Дон каналын төҙөү, һуғыш тарафынан туҡтатылып торғандан һуң, 1948 йылдың май айында киңерәк темптар менән дауам иттерелде.

Судноларҙы йөрөтөүсе канал — беҙҙең эпохаһының бөйөк ҡоролмаһы. Уның оҙонлоғо 101 километр. Ул тулыһынса дүрт йыл эсендә (1948—1951) төҙөлөп бөтәсәк. Ә Панама каналы 20 километрға ҡыҫҡараҡ булһа ла, 35 йыл төҙөлгән.

Ҡеүәтле ер насос [illegible] һәр секунд һайын 135 кубометр һыу [illegible] Европала [illegible] Женева күле кимәлен бер йыл эсендә 10 метрға түбәнәйтә алыр ине.

Цимлянск станицаһы янында грандиоз гидроузел төҙөлә. Ул 500 метр оҙонлоҡ плотина, 12,8 километр оҙонлоҡ ер полотноһы, [illegible] шлюз, гидроэлектростанциянан, Дон магистраль һуғарыу каналына һыу бирә торған баш ҡоролманан торасаҡ.

Цимлянск плотинаһы «Дон диңгеҙен» барлыҡҡа килтерә. Унда 12,6 миллиард кубометр һыу буласаҡ. Дон һыуы ул ваҡытта 26 метрға күтәреләсәк.

Һуғарыу каналдарын төҙөү 750 мең гектар ерҙе һуғарырға, ике миллион гектар ерҙе һыу менән тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк.

Цимлянск гидроузелы судноларҙы йөрөтөүсе Волга—Дон каналының төп ҡоролмаларының береһе булып тора. Ул ике плотинанан һәм гидростанциянан торасаҡ.

Һүрәттә: төҙөлә торған Цимлянск ГЭС-ының котлованына инеү урыны.

С. Кропивницкий фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).



Волга—Дон каналын төҙөү.
Һүрәттә: 25-се номерле ер [...] снаряд эш өҫтөндә.

С. Кропивницкий фото[...]
(ТАСС фотохроника[...])

Шлюз — комсомолецтәр ҡоролмаһы булыр

Беҙҙең төҙөлөш районы [...] бик ҙур эштәр йөкмәтелә. Беҙ [...] метр оҙонлоҡ канал ҡаҙырға, 5 [...] төҙөргә, бик күп гидротехник обору[...] инеләргә монтаж яһарға һәм [...] поселка төҙөргә тейешбеҙ. Бының [...] беҙгә бик күп ер һәм бетон эштәре [...] ҡарырға кәрәк буласаҡ.

Был бурыстарҙың яуаплылығын [...] тәр айырыуса асыҡ аңлай. Комсомо[...] һәр ваҡыт каналды төҙөүселәрҙең [...] ғы сафтарында баралар. Монтаж [...] участкаһының техниге Серафима [...] ко, өсөнсө номерле экскаваторҙың [...] ник ярҙамсыһы Иван Перебрест[...], [...] эштәр участкаһының механиге Р[...] шакова, геотехник лабораторияһы[...] кәп инженеры Алексей Бородин [...] бик күптәр күренекле комсомо[...]. Улар юғары эш өлгөләре күрһәтәләр.

Беҙҙең төҙөлөш районында [...] сомолецтарҙың посттары бик яҡшы [...]. Улар бетон заводтарында һәм [...] айырыуса ҙур ярҙам итәләр. Был [...] низмдарҙың буш тороуҙарына [...] май. Бөтә ҡыйынлыҡтар, етешһеҙ[...] тураһында үҙ ваҡытында уҡ хәбәр [...].

Йәш эшселәр батыр хеҙмәт күрһә[...] дәре кеүек, үҙҙәренең ял ваҡыттары[...] культуралы итеп уҙғаралар. Күптә[...] гел генә ҙур клуб төҙөлгәйне. [...] ҙәр кисәләр уҙғарыла, лекциялар [...].

Беҙҙең Чапурниковка төҙөлөш р[...] ның комсомол ойошмаһы Волга—[...] каналының алтынсы номерле [...] йәштәр һәм комсомолецтар [...] төҙөргә ҡарар итте. Комсомолецтә[...] ҡарарҙы ерелә еткереп үтәү [...] шәләр.

Т. Кеш[...]

Волга—Дон каналының Чапурни[...] ка төҙөлөш районы комсомол о[...] маһы секретары.

СТАЛИНСЕ ТӨҘӨЛӨШКӘ БӨТӘ ХАЛЫҠ ЯРҘАМЫ

Главгидроволгодонстройҙың материаль-техник тәьминәт управлениеһе начальнигы Е. А. Похомов менән беседа

Волга—Дон каналында киләһе йәйҙә навигация флагы күтәреләсәк. Яңы һыу юлынан диңгеҙ пароходтары, комфортабелле теплоходтар, төрлө йөктәр тейәлгән буксирҙар үтерҙәр. Тыуған илебеҙҙә ҡеүәтле, совет халҡының бәхете өсөн арзан һәм уңайлы һыу юлы асылыр. Бының менән халыҡтың күптәнге хыялы тормошҡа ашасаҡ, шулай уҡ илебеҙҙең Европа өлөшөндәге бөтә әсе диңгеҙҙәрҙе тоташтырыу идеяһы тулыһынса хәл ителәсәк. Шулай итеп, һөйөклө Мәскәү биш диңгеҙҙең — Балтик, Аҡ, Каспий, Азов һәм Ҡара диңгеҙҙәрҙең портына әүерелер.

Был, ысын мәғәнәһе менән әйткәндә, гигант эш. Тарихта күрелмәгән масштабтағы, бығаса һис ҡайҙа тиңдәше булмаған ҡыҫҡа сроклы бөйөк төҙөлөш. Уның төҙөлөп бөтөү срогы әлек тә ҙур түгел ине. Ә хөкүмәтебеҙ бөтә халыҡ бәхетенә уның төҙөлөп бөтөү көнөн тағы ла ике йылға ҡыҫҡартты. Тимәк, эш темпы бында бигерәк тә ҙур, алымы киң, механизация менән ҡоралландырылыуы юғары булырға тейеш.

Хәҙерге көндә Сталинградтан алып Калач ҡалаһына саҡлы Волга менән Дон араһы, Цимлянский станицаһы районына тиклем, ә унан бөтә Ростов өлкәһе буйынса гигант төҙөлештәр йәйелдерелде. Элекке ҡороҡһоҡло һәм ярым сүл ҡәлендәге далалар йәнләнделәр, үҙгәрҙеләр, ысын индустриаль төҫ алдылар. Был урындарҙа төҙөкләндерелгән яңы поселкалар үҫте, бетон һәм ремонт заводтары, автобазалар, трактор участкалары, арматура йорттары һалынды, автомобиль һәм тимер юлдар, электр селтәрҙәре, телефон линиялары уҙғарылды. Волга—Дон каналының бөтә трассаһында, Цимлянск гидроузелында ла бөтә киңлеккә ер эштәре йәйелдерелгән, тау-тау өйөмдәр алла ҡайҙарҙан уҡ күренеп тора. Улар — каналдан алынған ер, һыу ятҡылығы өсөн һалынған дамба һәм плотиналар. Бында экскаваторҙар ҙа, портал крандары, трактор һәм автомашиналар ҙа, скрепер һәм бульдозерҙар ҙа етерлек. Ниндәй генә механизм юҡ!

Был тиклем ҙур масштабтағы эште башҡарыу өсөн, билдәле, күп техника, төрлө-төрлө оборудованиелар, установкалар, аппаратуралар, материалдар һәм инструменттар кәрәк. Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтле промышленносе бындай бөтә кәрәк-ярағы етештерә, гигант техника менән тәьмин итә.

Төрлө өлкәләр менән бер рәттән Совет Башҡортостаны ла беҙгә бик күп оборудованиелар һәм материалдар ебәрә. Волгодонстройҙың материаль-техник тәьминәт управлениеһе работниктары уның предприятиеларына бик күп заказдар яһанылар һәм бик күп нәмәләр алына. Шулай уҡ икенсе заводтар аркыры килгән нәмәләр ҙә Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең ярҙамы бар икәнлеген күрһәтәләр.

Төҙөлөштә массовый рәүештә ҡулланылған скреперҙарҙа, экскаваторҙарҙа, лебедкаларҙа һәм башҡа төр оборудованиеларҙа Белорет ҡорос-сымыҡсылары етештергән канаттар үҙҙәренең ныҡлыҡтарын, ышаныслы икәнлектәрен күрһәттеләр.

Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы станоктар төҙөү заводында етештерелгән вертикаль сверлильный станоктар ҙа, ундағы төҙөлөш машиналары заводында әҙерләнгән ауыр дизель-сүкештәр ҙә яҡшы эшләйҙәр. Тик шуныһы уңайһыҙ: был ике заводҡа яһалған заказдар әле булһа тулыһынса үтәлмәгәндәр. Ә вертикаль станоктар ҙа, дизель-сүкешле каперҙар ҙа беҙҙең төҙөлөш өсөн бик кәрәк.

Беҙҙең был гигант төҙөлөштә үҙ-ара бәйләнеш тотоу, уның менән оператив етәкселек итеү өсөн связь средстволарының яҡшы һәм аныҡ эшләүе кәрәк. Был эштә Өфө ҡалаһының заводтары, беҙгә күп кенә аппаратуралар биреп, ҙур ярҙам күрһәттеләр. Өфө телефон аппараттары заводы етештергән төрлө типтағы коммутаторҙар ныҡлы итеп әҙерләнгәндәр, уларҙың ҡеүәте, проекттағыға ҡарағанда, ҙурыраҡ, хеҙмәтләндереү ҙә артыҡ ҡатмарлы түгел. Башҡа заводтарҙан килгән оборудованиелар ҙа нигеҙҙә яҡшы сифатлы, коммунизм төҙөлөшөндә ярҙам күрһәтерлек. Ләкин был оборудованиеларҙың алдағы экземплярҙарында иҫкә алып төҙәтә торған етешһеҙлектәре лә күп.

Ҡайһы бер оборудованиеларҙың конструкцияһы уңышлы уҡ түгел. Ә күп кенәләрендә яҡшы проект та дөрөҫ итеп тормошҡа ашырылмаған, хатта күп кенә деталдарҙы йыйыу ваҡытында бутап, яңылыштырып ҡуйылыуҙары ла бар. Бындай етешһеҙлектәрҙе төҙөлөштәге эшселәрҙең, инженер-техниктарҙың үҙҙәрена бөтөрергә, уңайлыраҡ итеп үҙгәртергә, эшләнеп етмәгән урындарын эшләп еткерергә тура килә.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре беҙҙең төҙөлөштә асыҡланған етешһеҙлектәрҙе һис һүҙһеҙ төҙәтерҙәр, артабан әҙерләнгән оборудованиеларҙа уңдайһыҙлыҡтар булдырмаҫтар, продукцияның отлично сифатлы өсөн көрәшерҙәр, технологик процестарҙы камиллаштереп, производство культураһын күтәрерҙәр, тип ышанырға кәрәк.

Шуны ла әйтеп үтеү урынлы. Башҡортостан предприятиелары үҙҙәренә яһалған заказды ваҡытында үтәү менән етерлек кимәлдә ҡыҙыҡһынмайҙар. Цехтарҙа, бәлки, заказдар тиҙ үтәлә торғандыр. Ләкин әҙер продукцияны оҙатыу, уның сталинсе төҙөлөштәргә барып етеү эшмәкәрлектәре менән ҡыҙыҡһынмауы ҡайһы бер работниктарҙың һалҡын ҡарашы һөҙөмтәһендә беҙ бирелгән заказдарҙы бик һуңлап ҡына алабыҙ. Һуңғы ваҡыттарҙа яһалған заказ буйынса Стәрлетамаҡ станоктар төҙөү заводынан вертикаль сверлильный 10 станоктың әле береһе лә алынмаған. Икенсе маркалағы 6 станоктың да икеһе генә килде. Ә бындай станоктар беҙгә былар-ынан тыш тағы ла унарлап кәрәк. Дизель-сүкешле каперҙар ҙа беҙгә байтаҡ ҡына талап ителә.

Беҙҙең заказдарҙы Өфө заводтары айырыуса ҙур һуңлау менән үтәйҙәр. Беҙҙең управление кабель заводынан һоралған 10 километр проводтың бишеһен, ике километр шнурҙың береһен генә алды. Радиомеханика заводынан һоралған бер мең дана металлик мембрананың береһе лә килмәне. Электр оборудованиелары заводына ла беҙ, 192 дана универсаль переключателдәргә заказ яһап, уларҙың береһен дә алғаныбыҙ юҡ әле. Телефон аппараттары заводы заказдарҙы ваҡытында килеп етеүенә айырыуса ҙур һалҡынлыҡ күрһәтә. Ул беҙгә ҡала-араһы 48 станцияның әле береһен дә ебәрмәне. 100 телефон аппаратының да 60-ы ғына килде. Башҡа заказдарҙың да үтәлеше шундай уҡ насар хәлдә. 100 дана штепселдең, 1200 линзаның, 100 катушканың 100 переключателдең, 60 звоноктың әле береһе лә төҙөлөшкә килеп етмәгән.

Башҡортостан территорияһындағы башҡа заводтар ҙа заказдарҙы срогынан алда үтәүгә тейешле иғтибар биреп еткермәйҙәр. Күпселек осраҡта, күрәһең, шулай була. Эшселәр стахановсы вахтала заказды үтәйҙәр, ә тәьминәт-оҙатыу бүлектәре тиҙерәк оҙатыу сараһын күрмәйҙәр, техник-контроль бүлеге юғары сифат өсөн етерлек кимәлдә көрәшмәй. Заказдарҙың һуңлап килеүендә һис һүҙһеҙ Өфө тимер юлының да ҡатнашлығы булырға оҡшай. Башҡа юлдарҙа коммунизм төҙөлөштәренә йөктәрҙе һис тотҡарлыҡһыҙ оҙатыу лозунгыһы аҫтында көрәш киң йәйелдерелгән ваҡытта Өфө тимер юлсылары быға тейешле иғтибарҙы биреп еткермәйҙәр. Шуға күрә лә күп заказдар һуңлап килә, ә ҡайһы берҙәренең ҡайҙа ятыуҙарын да белеүе ҡыйын.

Әйтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн көрәшеү Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең намыҫ бурысы. Был көсөргәнешле һәм өҙлөкһеҙ хеҙмәтте, большевистик принципиаллекте талап итә. Ә Башҡортостан хеҙмәтсәндәренә беҙҙең Волга—Дон төҙөлөшө өсөн эшләйһе эштәр күп.

Беҙҙең материаль-техник тәьминәт управлениеһена лә, башҡа управлениелар кеүек үк, бик күп хаттар, телеграммалар килә. Уларҙы Тыуған илебеҙҙең төрлө өлкәләренән, төрлө заводтарҙан яҙалар. Уларҙың бик күптәрендә Волга—Дон төҙөлөшө исемендәге бригадалар, участкалар ойошторолған. Был маҡтаулы исемде алыу өсөн улар фиҙакәр хеҙмәт күрһәтәләр.

Завод коллективтары беҙгә яҙған хаттарында, үҙҙәренең производство профилдәрен күрһәтеп, пландан тыш бирелгән продукция һәм экономияланған материалдар иҫәбенә һис бер төрлө нарядһыҙ ҙа беҙҙең заказдарҙы үтәүгә әҙер икәнлектәрен ҡайнар теләк менән белдерәләр. Ундай предприятиелар беҙгә бик ҙур, иҫәп биреп бөтмәҫлек ярҙам күрһәтәләр. Бөтә кәрәк ярағы уларҙан алабыҙ. Тик бындай хаттар Башҡортостандан килмәйҙәр. Ниңәлер уның предприятиеларында бындай ы[...] һыныусанлыҡ бөгөнгә тиклем юҡ [...].

Партияның республикалағы р[...] ҡала комитеттарынан да, башҡа [...] ларҙың да етерлек кимәлдә иғтиба[...] мәүҙәре күренә. Сталинград, Ростов, [...] тов өлкәләренең, Украинаның [...] ойошмалары беҙҙең төҙөлөшкә [...] итәләр, беҙҙең заказдарҙың үтә[...] булған етешһеҙлектәр һәм [...] нән ҡыҙыҡһынып, ҙур агитацион-[...] вый эш алып баралар. Бындай эш [...] ҡаһы үҙенең бөтә өлкәләрҙә лә [...] ға кәрәклеген күрһәтте.

Волга—Дон төҙөлөшө—яңы [...] Шуға күрә лә уға бөтә нәмә [...] тәр ваҡ нәмәнән ҙур механизмдар[...] бөтәһе лә беҙгә ярҙам итә ала. Б[...] тор һәм автомашиналарҙың запас [...] етешмәй. Ҡорос иретмәләр, таш [...] машиналар өсөн бысаҡтар, ҡорос [...] металл ҡырҡыусы төрлө станок[...] чиктар, бораулар, киҫкестәр, [...] ҡайрау станоктары, дизель-сүке[...] төрлө ябай инструменттар, черте[...] лары кеүек бик күп нәмәләр к[...].

Бындай нәмәләрҙең етешмәү[...] эшебеҙгә ҙур тотҡарлыҡ яһай. [...] уларҙы етештерә алған предпр[...] төҙөлөштең материаль-техник тә[...] равлениеһе менән бәйләнеш то[...] ярҙам итһәләр, коммунизм тө[...] вклад индерәсәктәр.

Коммунизмдың гигант маги[...] ҙөүселәр ҙә ил халҡы алдында [...] булып ҡалмаҫтар. Улар, ст[...] йыллыҡтың уңышлы үтәлеүе[...] көрәшенең көсәйеүе менән рух[...] нал трассаһында социалистик [...] тағы ла киңерәк йәйелдерәләр. [...] ҙур энтузиазм менән эшләп, ст[...] таулы заданиене тиҙерәк үт[...] шәләр. Канал партия һәм [...] билдәләгән срокта төҙөлеп бөт[...]

Бөтә халыҡ төҙөлөшө

Волга—Дон каналы төҙөлөшө Ватаныбыҙҙың алдынғы техникаһы менән ҡоралландырылған. Бында атлауысы ҡеүәтле экскаваторҙар, бульдозерҙар, скреперҙар һәм башҡа күп кенә механизмдар эшләйҙәр.

Һүрәттә: Атлауысы ЭШ—I экскаваторы эш өҫтөндә.

С. Кропивницкий фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

ЯҠШЫ СИФАТЛЫ АППАРАТУРАЛАР КӘРӘК

Зур төҙөлөш менән оператив етәкселек итеү өсөн яҡшы ойошторолған связь кәрәк. Волга—Дон каналы төҙөлөшөндә яңы конструкциялы аппаратуралардан торған связь бик талапҡа тулы яуап бирә. [illegible] Өфө заводтарында эшләнгән [illegible] связь аппаратуралары үҙҙәрен [illegible] күрһәттеләр.

Тик шуны әйтергә кәрәк: эксплуатациялау процессында аппаратураның байтаҡ ҡына дефекттары барлыҡҡа килеүе күренде. [illegible]

[illegible]

Н. Милейковская,

Волга—Дон төҙөлөшө связендәге баш контораһы инженеры.

Бетон ташыуҙа конвейер

Мин 11 номерлы бетон ташыусымын. Бетон заводы әҙерләнә. [illegible] Бетон эше зур етеҙлек талап итә. Сәнки озаҡ тотһаң — ул ҡата. [illegible]

Шуға күрә лә был эш маҡтаулы һәм ауыр эштәрҙең береһе тип һанала. Минең дуҫтарым — Урал егеттәре лә был эште ҙур һөйәү менән башҡаралар.

Г. Аникеев.

Мариновка төҙөлөш районының шоферы.

Донда һуғарыу королмаларының ҙур төҙөлөшө

Коммунизмдең бөйөк гиганты Волга—Дон төҙөлөшөндә Ростов һәм Сталинград өлкәләренең ерҙәрен һуғарыу мәсьәләһе ҙур урын тота.

Был — элек-электән ҡоролоҡло урындар. Сал һәм Көнбайыш Маныч йылғалары тирәһендә киң полоса булып Сал яландары һуҙылған. Бында йәй оҙон да, йылы ла була. Яҡтылыҡтың һәм йылылыҡтың бай булыуы, вегетацион осорҙоң оҙон килеүе, тупраҡтың уңышлылығы ауыл хужалығын интенсив үҫтереү өсөн бик ҙур уңғай шарттар тыуҙыра. Ләкин был байлыҡтарҙы биргән тәбиғәт бындағы райондарҙың ерен һыуҙан махрүм иткән. Каспий арты сүлдәренән иҫкән көнсығыш елдәре, йәй көндәрендә ҡайнар ҡом массалары килтереп, үҫемлек төбөн ҡороталар, ә ҡыш көндәрендә, баҫыуҙарҙан ҡарҙы осороп бөтөрөп, уңымдарҙы туңдыралар.

Шуға күрә лә беҙҙең юлбашсыбыҙ иптәш Сталин инициативаһы менән Волга—Дон каналы төҙөлөшө комплексына киң күләмле һуғарыу системаһын төҙөү индерелде. Партия һәм хөкүмәтебеҙҙең ҡарары нигеҙендә башҡарылған һуғарыу ҡоролмаларын төҙөүҙә тәбиғәттең ҙур хатаһын төҙәтеү, уның ҡоролоҡ законын еңеү һәм халыҡтың һыу тураһындағы элекке хыялын тормошҡа ашырыу, был ҡоролоҡло райондарға һыу биреү мәсьәләһе ҡарала.

Һуғарыу каналдарының селтәре Сал яландарын төрлө урындан киҫеп үтер. Каналдарҙың ярҙарына, ҡоро елдәрҙе туҡтатыр өсөн, урман полосалары ултыртылыр. Һәм был райондар беҙҙең Тыуған илебеҙҙең иңһынғыҙдағы сәсәү атыусы ергә әйләнерҙәр.

Каналдарҙы төҙөү эше хәҙер бөтә киңлегенә йәйелдерелгән. Уның темпы көндән-көн тиҙләтелә. Күп кенә ҡоролмаларҙың контурҙары инде күренеп тора. 1951 йылда улар 100 мең гектар майҙанлыҡ ҡиммәт ерҙе һуғарыу мөмкинлеген бирәсәктәр.

Төҙөлөш трассаһында хәҙер төрлө типтағы ҡеүәтле механизмдар эшләй. Бында экскаваторҙар, бульдозерҙар, скреперҙар бик күп. Скреперҙар айырыуса күп ҡулланылалар. Уларҙың Урал һәм Украина заводтарында эшләнгән алты һәм ун кубометрлылары беҙҙең төҙөлөштә үҙҙәрен ныҡ аҡланылар. Тыуған ил промышленноҫының гүзәл көҙгөһө булған атлауысы электрик экскаваторҙар ҙа эшләйҙәр. Яңыраҡ ҡына 14 кубометр һыйышлы сүмесе булған атлауысы ҙур экскаватор монтажланып бөттө.

Һәр эш беҙҙә тик механизация ярҙамында ғына башҡарыла. Шул һөҙөмтәлә беҙ һуғарыу каналдары системаһын төҙөүҙе киң фронт менән йәйелдерә алдыҡ. Хәҙер Восход поселкаһы менән Малая Мартыновка ауылы араһында ҙур төҙөлөштәр бара. Был оҙон арала бер йыл элек кенә ялан ине. Быйыл төҙөүселәр өсөн матур поселкалар, Дон магистраль каналы, уны уҙғара торған тоннель, тимер юл станциялары, производство биналары төҙөлә. Был урындарға төндә килгәндә электр уттарының оҙон һәм киң теҙмәләргә һуҙылып емелдәүе алыҫтан уҡ ап-асыҡ булып күренә.

Коммунизм төҙөлөштәренең башҡалары кеүек, һуғарыу ҡоролмаларын да бөтә ил төҙөй. Гидротехник тоннель төҙөлөшөндә Мәскәү метроһын төҙөүселәрҙе лә, Донбасс шахтерҙарын да, скреперҙар йөрөтөүсе Челябе һәм Башҡортостан тракторсыларын да, Сталинград хеҙмәтсәндәрен дә күрергә мөмкин. Улар бөйөк төҙөлөштә ҡатнашыу исемен үҙҙәренең стахановсы хеҙмәттәре менән аҡлайҙар. Скреперистарҙан Щербина, Елисеев, Сибағатуллин һәм башҡа бик күп иптәштәр үҙ нормаларын 200 процентҡа үтәргә, механизмдарҙың ремонт-ара эшләү срогын бер ярым-тапҡырға оҙайтырға һәм уларҙы социалистик һаҡлыҡта эшләтергә йөкләмә алдылар һәм үҙ һүҙҙәрен еренә еткереп үтәйҙәр. Начальнигы коммунист иптәш Шепелев булған экскаваторҙың экипажы ла өлгөлө эшләй.

Ростов комсомолецтары Волга—Дон төҙөлөшөндә актив-ҡатнашыу өсөн бөтә өлкә йәштәренә мөрәжәғәт иттеләр. Был комсомолецтарҙың активлеген тағы ла күтәрҙе. Бөтә өлкәләрҙән, бөтә ҡалаларҙан беҙҙең төҙөлөшкә төҙөүселәр, беҙҙең өсөн иң кәрәк булған тракторсылар, экскаваторсыҡтар, гидротехниктар килә. Бөтә ил халҡы ярҙам итә беҙгә.

Рөстәм Тананаев,

Һуғарыу ҡоролмалары управлениеһының баш инженеры.

Мине Башҡортостан үҫтерҙе

Атлауысы ҙур экскаватор монтажланғандан бирле мин унда смена начальнигы булып эшләйем. Был гигант машина менән беҙ тәүге көндәрҙә үк тәүлегенә унар мең кубометр ер ҡаҙып әйә инек. Хәҙер экскаваторҙы яҡшы үҙләштереп еттек. [illegible]

[illegible] Стәрлетамаҡ төҙөлөш тресы үҫтерҙе мине. Экскаваторлыҡ квалификацияһына ла унда, Сергей Дмитриевич Белых иптәштән өйрәндем. Уның уҡытыуы, үҙемдең тырышлығым бушҡа китмәне.

[illegible] «ЭШ—14/65» [illegible]

[illegible] кешенең хеҙмәтен алыштыра. Тыуған ил заводы уны шундай ҡеүәтле, иҫ киткес аҡыллы итеп төҙөгән. Һис тотҡарлыҡһыҙ эшләй. Уның менән идара итеү бер генә кешегә лә бик еңел.

[illegible]

Михаил Митрошин,

«ЭШ—14/65» экскаваторының смена начальнигы.



СТАЛИНСЕ ТӨҘӨЛӨШ ПАНОРАМАҺЫ

Бында суднолар йөрөтәсәк Волга—Дон каналы һәм Дон буйы далаларында төҙөләсәк һуғарыу [illegible] системаһы һүрәтләнгән.

> *Волга менән Донды тоташтырыу тураһында рус халҡының күп быуаттар буйына һаҡланып килгән хыялын тормошҡа ашырып, беҙ тыныслыҡ өсөн көрәштең алғы сафында барғанлығыбыҙҙы яҡшы аңлайбыҙ.*
>
> (Волгодонстрой төҙөүселәренең иптәш И. В. Сталинға яҙған хатынан).

Өфө хеҙмәтсәндәре беҙҙең ышанысты аҡларҙар

Волга—Дон каналы төҙөлөшөндәге связь өсөн Өфө ҡалаһының заводтары бик күп аппаратуралар әҙерләйҙәр. Төрлө типтағы коммутаторҙар, телефон аппараттары һәм связь үлсәүес аппараттары беҙҙең эштә ҙур ярҙам итәләр һәм киң ҡулланылалар.

Был аппаратуралар сифат яғынан түбән түгел. Эштә ныҡлыҡ менән дә танылдылар. Тик шуны әйтергә кәрәк: бындай аппаратураларҙың айырым узелдары камиллэштереүҙе талап итә.

Бәләкәй габариттағы реле коммутаторҙар беҙҙең төҙөлөш шарттарында үҙҙәрен аҡланылар. Улар эштә ныҡ. Хеҙмәтләндереүгә ябай. Хатта түбән квалификациялы техник персонал да бындай станцияны монтажлай һәм хеҙмәтләндерә ала. Тик уларҙың шнур-контакттары насар. Пружиналары уңайһыҙ урынлаштырылған һәм насар сифатлы.

Икенсе төрҙәге коммутаторҙар ҙа ҙур эксплуатацион мөмкинлек менән әҙерләнгәндәр. Эштә сыҙамлы. Ләкин улар ҡайһы бер камиллэштереүҙе талап итәләр. [illegible]

Эш урыны схемаһы эшләп еткереүҙе талап итә. Фратерҙарҙы ялғаған ваҡытта иштелеү түбәнәйә. Схеманың бындай етешһеҙлектәрен беҙ үҙебеҙ бөтөрәбеҙ. Ләкин аппаратураның был өлөшөнә бындай етешһеҙлектәр генә түгел, хатта проводаларҙың яңылыштырып ҡуйылғандары ла бар. Быларҙы, шулай уҡ ҡала-ара линияһындағы транзит оялары монтажлауҙы завод коллективы беҙгә ышанып ҡалдырмайынса, үҙе эшләп ебәргән булһа, әлбиттә, яҡшыраҡ булыр ине.

Алты линиялы ҡала-ара коммутатор ҙа бик ныҡ итеп эшләп еткереүҙе талап итә. Уның коммутатор тигелеге монтажланмаған, туры абоненттәрен ҡайтанан ҡарап сығырға, статив реләһенә комплекттар ҡуйырға кәрәк.

Бындай етешһеҙлектәр коммутаторҙарҙың һәр марҡаһында бар. Күп кенә урындарын үҙгәртеп, камиллэштереп эшләгәндә уларҙың икенселәре һис һүҙһеҙ яҡшыраҡ, юғары сифатлыраҡ булыр ине. Завод коллективының киләсәк көндәрҙә, коммунизм [illegible]

Е. Федоров,

Главгидроволгодонстройҙың бик төҙөлөш-монтаж конторы начальнигы.

Төҙөлөшкә килегеҙ, ҡыҙҙар!

[illegible] Волга—Дон каналы төҙөлөшөнә [illegible]

Мин бынан бер нисә йыллар элек Черниковск ҡалаһындағы электр лампалары заводында сеточница булып эшләгәйнем. [illegible]

Төҙөлөштә беҙҙең Башҡортостандан бик күп кешеләр ҡатнаша. [illegible] Килегеҙ, ҡыҙҙар! [illegible]

Екатерина Кацель,

материаль-техник тәьминәт управлениеһы работнигы.

Тарих биттәренән...

* 225 йыл элек рус батшаһы Петр I ике бөйөк йылғаны — Волга һәм Донды канал менән тоташтырырға ҡарар итә.

* 1698 йылда канал төҙөлә башланған. 15 меңдән артыҡ һалдат өс йыл буйы ер эшен башҡарған. Ләкин канал яртылаш төҙөлөп бөткәс аҙағы ташҡын менән емерелгән.

* Петр батша шулай ҙа Волга менән Донды тоташтырыу [illegible] ған.

* Бынан һуң да, батша хөкүмәтенең һалҡын ҡарауына ҡарамаҫтан, Волга—Дон мәсьәләһе менән ҡыҙыҡһынғандар. 1910 — 1912 йылдарҙа күренекле рус гидротехнигы Н. П. Пузыревский тарафынан [illegible] проект бирелгән. [illegible] лар ике баҫҡыс булып Дон һәм Волга яғында төҙөлергә тейеш булған. Хәҙер төҙөлгән Волга—Дон каналының нигеҙенә шул принцип алынған.

Коммунизм төҙөлөштәрендә

1. ХАЛҠ ҺУЛЫШЫ

Вагондан төшкәс тә биткә Дон елдәре бәрелде. Төрлө яҡтарҙан, алыҫ юлдар үтеп килгән пассажирҙар ирбен һәм тулы итеп тын алдылар. Бынан йылға үҙе лә алыҫ түгел ине. Уның ярҙары янынан бөйөк булып күтәрелгән тауҙар оҙон теҙмә булып һуҙылғандар. Ә ҡаршыла Калач ҡалаһы.

Тапаш йорттарҙан, тар урамдарҙан торған был ҡала тик һуғыш тарихынан генә билдәле ине. Хәҙер уны танынылар, вагонда ла, Сталинградтың үҙендә лә уны ҡелдән төшөрмәйҙәр.

Эйе, унда бөйөк эштәр башҡарыла хәҙер. Коммунизм төҙөлөштәренең береһе, башҡаларына ҡарағанда тиҙерәк сафҡа баҫа торған Волга—Дон каналы төҙөлә бында. Ҡаланың ябай, ләкин яҡты бүлмәләрендә эш ҡайнай, уға оператив сводкалар килә, унда производство пландарына координация бирелә, проекттар яһала.

Калачта яңы тормош башланды. Кешеләр ҙә янысы һулыш алалар, бигерәк тә юғары уйҙар менән бәшәйҙәр, яңы еңеү, яҡты бәхеттәр өсөн көрәшәләр, коммунизмдең гүзәл юлын төҙөйҙәр. Совет хөкүмәтенең Волга—Дон каналын төҙөү срогын ҡыҫҡартыу тураһындағы тарихи ҡарары бында иҫ киткес ҙур геройлыҡ тыуҙырҙы. Совет кешеләре уны ҙур оҫталыҡ һәм юғары патриотик тойғо менән тормошҡа ашыралар.

Канал шул Калач янында Донға килеп тоташа, Сталинград ҡалаһы ла бынан артыҡ алыҫ түгел. Ике гүзәл рус йылғаһы киң тулайҙар, алыҫ юлдар үтеп, шул тирәлә бер-береһе менән осрашыр өсөн янып, бик яҡын уҡ килеп етә. Тик шулайҙа ла тәбиғәт кенә уларҙы бөйөк һырттар менән айырған, һәм улар бер-береһенән алыҫлашҡандар.

Волга менән Дондың иң яҡын араһында борон-борондан һыу юлы булған. Беҙҙең эраның тәүге быуаттарында уҡ әле кешеләр Дондан Иловля йылғаһы менән Волгаға яҡынлашҡандар. Унан һуң Волгаға ҡоя торған Камышинка йылғаһы ла алыҫ түгел. Йөк тейәлгән кәмәләр шул йылғаларҙа йөрәтелгән. Ә ике арала уларҙы һөйрәп алып барғандар. Унан үҙ кәмәләрен һөйрәп князь Игорь ҙа үткән. Дон казактары һәм Степан Разин дә йөрөгән. Ә ҡыйыу батша Петр I был урынды яһалма канал менән тоташтырырға тырышҡан.

Петр I ҡаҙытҡан каналдың эҙҙәре бөгөнгә көндә лә бар. «Петр валы» тигән исем менән географияға ингән ул. Был эшкә ул, үҙенең 35 мең һалдатын ҡуйып, ерҙе көрәктәр менән ҡаҙытҡан, ҡаҙылғанын тоҡтарға тултырып елкәләрҙә ташытҡан. Әсе һауала, ҡомло елдәрҙә, аслы-туҡлы булып та, батыр рус кешеләре бер йыл эсендә, каналдың байтаҡ ҡына өлөшөн ҡаҙып, бер шлюз яһап ҡуйған булғандар. Ләкин ул шлюзде берәнсе яҙҙа уҡ ҡотороңҡо ташҡын һыуы емереп алып киткән.

Бынан һуң да канал тураһында бик күп һүҙҙәр булғылаған, төрлө заманда төрлө кешеләр үҙҙәренә ярашлы маҡсат менән генә проекттар биреләгәндәр. Ләкин эш сыҡмаған.

Тик большевиктар партияһы ғына халҡ хужалығында ҙур әһәмиәт тотҡан был каналды төҙөргә тейешле әһәмиәт бирҙе. Ул күптән төҙөлеп тә бөткән булыр ине. Гитлерсе ғәскәрҙәрҙең беҙҙең Тыуған илебеҙҙең тыныс тормошон боҙоуҙары ғына быны туҡтатты. Һуғыштың ауыр яралары бер ни тиклем уңалтылғас, 1948 йылда Волга—Дон каналын төҙөү эштәре яңынан йәйелдерелде. Был гигант эштең срогы тәүҙә 6 йылға билдәләнгән ине. Илебеҙ промышленносының көсө, совет халҡының ҡайнар теләге был срокты ике йылға ҡыҫҡартырға тулы мөмкинлек бирҙе.

Канал быйыл төҙөлеп бөтәргә тейеш. Киләһе яҙҙа бында навигация флагы күтәреләсәк. Бөтә эште был ҡыҫҡа срокта башҡарып бөтөрөү өсөн бөтә ҡыш буйы һис туҡтауһыҙ йәнле эш барҙы. Төҙөүселәрҙең хеҙмәттә тыуған энтузиазмына ҡаты һыуыҡтар ҙа, көслө буранлар, өҫе елдәр ҙә, тотҡарлыҡ яһай алманы. Эш көн-төн дауам итте бында.

Был һыу юлының күп участкаларында канал бөтөнләй әҙер тиерлек. Ҡалҡыу урындарҙы соҡоп, түбән урындарға һыу ятҡылығы өсөн дамбалар өйөп ярҙар яһалған, матур итеп таш түшәлгән. Пароходтар уҙғарып ебәрергә лә мөмкин. Шлюздар яһала, насос станциялары төҙөлә, авария ҡапҡалары, яңы поселкалар, юлдар... Бик күптәр һәм гүзәлдәр улар. Бөтә канал буйынса матур панорама күҙәләнә.

Ҡомлоҡтарҙың һыуһыҙлығына бында оҙаҡламай сик киләсәк. Каналға яҡын булған ауылдарҙың күбеһе кеүек, Ивановка ауылында ла һыу юҡ. Тәрән-тәрән ҡоҙоҡтарҙа ла татырлы һыу. Ләкин оҙаҡламай бында ла һыу булыр. Ҡояш нурҙарында кәмеш кеүек ялтырап ятҡан һыуҙарҙы ярып диңгеҙ теплоходтары, төрлө машиналарҙы, янтарь бойҙайҙы, Башҡортостан нефтен тейәгән суднолар, көслө буксерҙар уҙасаҡ бынан. Был, әлбиттә, әкиәткә, бындағы ауылдарҙа һөйләнгән хыялы легендаларға оҡшай. Ләкин уларҙың бөтәһе лә оҙаҡламай кешеләрҙең күҙ алдында буласаҡ. Һәр төҙөүсе, бөтә совет халҡы шул көндө яҡынайтыр өсөн көрәшә, тәрән һәм киң һулыш алып, уға бөтә ярҙамды күрһәтә.

— Волга менән Донды тоташтырып, рус халҡының боронғо хыялын хәл итәйек! — тиҙәр бында. Был лозунг кешеләр телендә лә ҡабатлана, эш объекттарында ла балҡый.

Төҙөлештә срогынан алда тамамлау өсөн бындағы бөтә төр профессия кешеләре лә социалистик ярышҡа сыҡҡандар. Һәр төҙөүсе был фондҡа үҙ вкладын индерә, үҙенең лицевой счетына һәр көн һайын яңы үҫеш яҙа.

Экскаваторсыҡтар — төҙөүселәрҙең алдынғы отряды. Социалистик ярыштың авангардында ла улар. Төҙөлөштәге иң өлкән экскаваторсыҡ иптәш Деминдең инициативаһы менән улар Май алды ярышын башлап ебәрҙеләр һәм гүзәл хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Машинаны һаҡлау, уның ҡеүәтен тулыһынса файҙаланыу, уны социалистик һаҡлыҡҡа алыу бында ярыштың төп шарты булып тора.

Береслав төҙөлөш районында эшләүсе экскаваторҙарҙың береһе эштән туҡтаны. Кабинканың асылған ишегенән таҙа кәүҙәле, майлы спецовка кейгән экскаваторсыҡ сыҡты ла, ергә һикереп төшөп, туптура забойға юнәлде.

— Был Федор Шевченко, смена начальнигы, — тине участка етәксеһе, — үҙ эшен ҡарарға китте.

Экскаваторсыҡ үҙ эшен хужа кеүек ҡараны. Тауҙа бер аҙ өҫтән барҙы, унан ул котлованға төштө, уның төрлө урындарын ҡарап урап сыҡты, ерҙе тотоп ҡараны. Ҡайҙа тәрәнлек етеңкерәмәй, ҡайҙан таҙартырға кәрәк — бөтәһен дә иҫәпкә алды. Ул килеүгә экскаватор эсендә лә тикшереү бара ине. Уның ярҙамсыһы — магнит станцияһының эшен ҡараны, янған контакттарҙы таҙартты. Механика өлөшө лә, подшипниктарҙың йылыныуы ла күҙ уңынан китмәне.

Экскаваторҙың был сменаһы яҡшы һәм ышаныслы итеп эшләүсе бик күп һандағы коллективтарҙың береһе ине. Эште һөйөп, еренә еткереп эшләү — хеҙмәттең төп законы булып әүерелгән бында.

Башҡа профессия кешеләре лә бурыстарын намыҫ менән үтәйҙәр. Красноармеец төҙөлөш районының шоферы Михаил Фролов «Баррикадец» экскаваторын хеҙмәтләндерә ине. Ғәҙәттәгесә, машинаһын экскаватор алдына ҡуйҙы. Һалғанда сүмес тулы түгел, шуға күрә йөк еңелерәк һымаҡ тойолдо уға.

— Тултырып һалығыҙ! — тине ул. Эштә бер генә кубометрға булһа ла нығыраҡ, тиҙерәк еңергә теләй ине. Тик бер генә кубометр түгел. Уға ла, башҡаларға ла бик күп машина ер ташырға кәрәк бит.

Шоферҙар ҙа экскаваторсыҡтарҙан ҡалышмайҙар. Улар, автомашиналарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алып, уларҙың ремонт араһындағы йөрешен оҙайттылар, бөтә ҡеүәтен ер, йәки бетон ташыуҙа ла, йөк йөрөтөүҙә лә тулыһынса ҡулланыу өсөн көрәшәләр.

Ҡыш та, яҙ ҙа бик ауыр килде. Һыҙ ҙа юҡ, эшләүе еңел түгел ине. Шулай ҙа эш бөтә фронтта ла уңышлы һәм берҙәм барҙы. Һәр төрлө профессия кешеһе үҙ ҡыйынлығын еңде. Шоферҙар юлһыҙлыҡ менән, экскаваторсыҡтар ерҙең туң булыуы һәм батҡаҡлыҡ менән көрәштеләр. Был ҡаршылыҡтар скреперистар менән бульдозеристарға лә бик күп осраны. Партал крандарының машинистары, земснарядтарҙың экипаждары иҫ киткес батырлыҡтар күрһәттеләр.

Эш бер генә минутҡа ла туҡталғаны юҡ. Һәр участкала ҡайнай ул. Канал төптәре тәрәнәйтелде, ярҙар тигеҙләнде, таш менән түшәлде, шлюздарға бетон һалынды.

— Ерҙә, — тинеләр төҙөүселәр, — үҙ халҡың файҙаһына хеҙмәт итеүҙән дә ҙурыраҡ бәхет юҡ.

Үҙ халҡының ҡыуанысы өсөн хеҙмәт итеүселәр араһында ысын батырҙар барлыҡҡа килде. Чапурниковка төҙөлөш районының десятнигы комсомолка Серафима Азаренко, скреперисы Н. Әһлиуллин, Береслов районының күренекле шоферы Шакуров, Дон районының специалисы Евгений Фролов, Водораздел районының экскаваторсыҡы Иван Селиверстов, атлауысы ҙур экскаватор экипажы начальнигенең урынбаҫары Хәсән Ямалетдинов кеүек хеҙмәт батырҙарын бында һәр кем белә, ысын йөрәктән ихтирам итә. Улар йөҙҙәр, меңдәр...

Сталинсе бөйөк төҙөлөштөң эксплуатацияға тапшырылыуына бер йыл ғына ваҡыт ҡалды. Бик аҙ ваҡыт ул. Ә эш күп. Ләкин был хәл бында берәүҙе лә ҡурҡытмай. Сөнки һәр кем минуттарҙың ҡәҙерен белә, һәр көндең ҙур үҫеш бирәсәген яҡшы аңлай, большевиктар партияһының, бөтә совет халҡының коммунизм төҙөлөшөнә бөтә ярҙамды күрһәтеүен тоя.

Эйе, төҙөлөш барышын бөтә халҡ күҙәтә, уға ныҡлап ышана, шуға күрә лә бөтә төр ярҙамды күрһәтә. Бөйөк илдең бөтә өлкәләренән, ҡалаларынан төҙөлөшкә эшселәр, специалистар килә, бөтә оборудованиелар, совет техникаһының юғары ҡаҙаныштары ебәрелә.

— Волга — Дон төҙөлөшөнә! — тип оҙаталар уларҙы һәм һис тотҡарһыҙ илтәләр.

Бөтә ил, бөтә совет халҡы ҡатнаша был төҙөлөштә. Ул, совет кешеләренең яҡты аңы, батыр ҡулдары менән төҙөлөп, ҡайнар һулышы менән йылытыла, бөйөк юлбашсының гениаль етәкселегендә тыныслыҡ һәм коммунизм еңеүе өсөн балҡып тыуа.

F. Ибраһимов.

Махсус хәбәрсебеҙ

Калач ҡалаһы.

Халҡ-ара күҙәтеү

Уолл-стрит наместниктәре эш өҫтөндә

Америка империализмының Көнбайыш Европалағы вәкилдәре асыҡтан-асыҡ сыҙамһыҙлыҡ билдәләрен күрһәтәләр. Төньяҡ атлантик блокҡа ылыҡтырылған илдәрҙә ҡабатлап ҡоралландырыу темптары уларға етерлек булып күренмәй. Уолл-стрит наместниктәре үҙҙәренә бойондороҡло хөкүмәттәрҙе милитаризация программаһын нисек кенә булһа ла һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үтәргә мәжбүр итеү өсөн баҫым яһауҙың бөтә төр формаларын ҡулланалар.

Был өлкәлә беренселек һис һүҙһеҙ Американың Бельгиялағы вәкиле Мерфи ҡулында. Ул Брюсселдә телмәр менән сығып яһаны, унда һуғыш әҙерләү расходтарын Бельгия хөкүмәтенең һис киҫекмәҫтән һәм байтаҡ арттырыуын талап итте.

Бельгияның премьер-министры Фольен был күрһәтмәне үтәргә ашыҡты. Ул үҙе тарафынан етәкселек ителгән хөкүмәттең хәрби ассигнованиеларҙы 30 миллиард франкҡа арттырырға ҡарар итеүе тураһында белдерҙе. «Фольен хөкүмәте, — тип билдәләне был айҡанлы Бельгия газетаһы «Роодэ фаан», — АҠШ-тың идара итеүселәренә тамам һатылды һәм уларҙың бойороҡтарын бер һүҙһеҙ үтәй».

Мерфи — бер үҙе генә түгел. Лондонда һәм Парижда, Римда һәм Гаагала уның коллегалары шулай уҡ, уларҙың фекере буйынса, Европа илдәренең етерлек тиклем етеҙ булмаған хәрби министрҙарын ашыҡтырыусы ролен ныҡышып үтәйҙәр. Американың Римдәге вәкиле күптән түгел Италия хөкүмәтенең 250 миллиард лир күләмендә ҡоралланыуға билдәләнелгән ғәҙәттән тыш ассигнованиеларҙы һис киҫекмәҫтән тормошҡа ашыра башлауҙы талап итте. Голландия хөкүмәтенә, «Голландияның хәрби расходтарын күптән түгел ике тапҡыр арттырыуҙы АҠШ хөкүмәте етерлек тип иҫәпләмәй», тип белдерелде.

АҠШ-та «оборона өсөн мобилизация управлениеһы» тип аталған нәмәнең етәксеһе Чарльз Вильсон көйөк «ауыр артиллерия» ходҡа ебәрелде. Ул «Американың һәм Европаның хәрби производствоһын берләштереү» тураһындағы мәсьәлә буйынса, йәғни Көнбайыш Европа илдәренең промышленносына Америка генеральный штабының тулы контролен урынлаштырыу тураһындағы мәсьәлә буйынса Парижға һәм Лондонға яңы инструкциялар килтерҙе.

Парижда Вильсон «Атлантик пакттың главнокомандующийы» Эйзенхауэр менән бик оҙаҡ беседа алып барҙы. Лондонда уны Англияның хәрби министры Шинуэллдың докладын көттө, Шинуэлл общиналар палатаһы трибунаһынан «күренекле» ҡунаҡты, Англия ҡоралланыуҙар программаһын бик намыҫлы тормошҡа ашыра, тип ышандырҙы.

Сит ил эштәре министрҙары урынбаҫарҙарының Париж кәңәшмәһендә көнбайыштағы өс держава вәкилдәре тарафынан алынған позицияны бөтә был факттар тулыһынса асыҡлайҙар. Дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡораллы көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне Джессеп, Дэвис һәм Пароди сит ил эштәре министрҙары Советы сессияһының көн тәртибенә индерергә теләмәйҙәр, сөнки улар был мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙең яңы бөтә донъя һуғышын әҙерләүсе империалистик кликаларҙың ҡулдарын сисеүенән һәм ирекле хәрәкәт итеүҙәрен кәметеүенән ҡурҡалар.

Халҡ-ара мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға [illegible] Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғаларҙы йыйнау буйынса кампания Париж кәңәшмәһендә совет делегацияһының позицияһы ғәйәт ҙур яҡлау тапҡанлығын ышандырырлыҡ иҫбатлау булып тора. Биш бөйөк держава араһында тыныслыҡ пакты, тыныслыҡты һаҡлау өсөн төп яуаплы булған державаларҙың мөһим халҡ-ара проблемаларҙы тыныс юл менән яйға һалыуҙары — халҡ-ара тыныслыҡ һәм именлектең бөтә бинаһының төп өлөшө булып тора.

5 майҙан 7 майға тиклем Дания башҡалаһы — Копенгагенда ултырыш үткәргән Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Бюроһы үҙ резолюцияһында: Тыныслыҡ Пактын төҙөү өсөн бөтә донъяла йәйелдерелгән кампания үлсәү ауырлығын тыныслыҡ файҙаһына баҫа ала, һәм һуғышҡа ҡаршы көрәш хәҙер хәл иткес файҙаға инде, тип билдәләне.

Америка вәкилдәре үҙҙәренән бойондороҡло илдәрҙә ни тиклем күберәк оятһыҙланһалар, ҡоралланыуҙар артыпан ҡыуыуҙы тиҙләтеүҙе ни тиклем ныҡышыбыраҡ талап итһәләр, тыныслыҡ өсөн көрәште көсәйтеү һәм был көрәштә берҙәмлекте нығытыу кәрәклеген аңлау киң халҡ массаларында әленән-әле күберәк үҫә.

Совет государствоһы ҡеүәтенең өҙлөкһеҙ үҫеүендә бөтә прогрессив кешелек был көрәштең тыныслыҡ эше өсөн еңеү менән тамамланыуына ышаныс ала. Шуға күрә совет халҡының бөтә дуҫтары, бөтә тыныслыҡты яҡлаусылар һуғыштан һуңғы бешенсе биш йыллыҡты совет халҡының уңышлы үтәүе тураһындағы, Советтар Союзында халҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемын сығарыу тураһындағы хәбәрҙе рухланып ҡаршыланылар.

Франция газетаһы «Юманите», капиталистик илдәрҙең идара итеүсе түгәрәктәре эксплуататорлыҡ режимен нығытыуға һәм хәрби әҙерләнеүҙәргә ғәйәт ҙур средстволар тотҡан ваҡытта, Советтар Союзында тыныс төҙөлештең бөйөк пландары тормошҡа ашырыла, тип билдәләй.

«Яңы совет заемы, — тип яҙа Англия газетаһы «Дейли уоркер»,—СССР-ҙың һуғыш менән ҡыҙыҡһынмауын, уның үҙ ресурстарын бөтә совет халҡының тормош кимәлен тағы ла күберәк күтәрәсәк бөйөк проекттарҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтеүен күрһәтә».

Совет халҡының бөйөк еңеүҙәре миллионлаған һәм миллионлаған кешеләрҙе тыныслыҡ өсөн изге көрәште артабан көсәйтеүгә рухландыралар.

Германияла халҡтан һорау

Немец халҡының артабанғы яҙмышы өсөн мөһим мәсьәләләр буйынса: «Германияның ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда Германия менән тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн һеҙ сығыш яһайһығыҙмы» тигән мәсьәлә буйынса халҡтың тауыш биреүе өсөн Германияла киң йәйелдерелгән хәрәкәт халҡтарҙың тыныслыҡ өсөн көрәшенең ҡушылта өлөшө булып тора.

Англияның оккупация зонаһында, Эссенда халҡтан һорау үткәреү буйынса үҙәк комитеты төҙөлгәндән һуң тик бер ай ваҡыт үтте. Был комитеттең ремилитаризациялауға ҡаршы һәм тыныслыҡ договоры өсөн плебисцит үткәреүгә саҡырыусы мөрәжәғәте Көнбайыш Германия халҡының иң киң түгәрәктәренең хәрәкәт итеү программаһына әйләнде. Германия демократик республикаһының хөкүмәте, халҡ палатаһы һәм демократик Германия милли фронтының милли советы был мөрәжәғәткә ҡушылды. Шулай итеп, халҡтан һорау өсөн хәрәкәт бөтә немец халҡының берҙәм хәрәкәтенә әйләнде.

«Германия демократик республикаһының граждандары һәм Көнбайыш Германияла әленән-әле арта барған һандағы [illegible]

[illegible] идара итеүселәренең төп ставкаһы. Эйзенхауэрҙың Көнбайыш Германияла инспекцион сәйәхәте; «Шуман планында» Көнбайыш Германияға бирелгән махсус урын; Бонн «хөкүмәтен» күптән түгел «тулы хоҡуҡлы член» сифатында Европа Советына ҡабул итеү — быларҙың бөтәһе лә Германияның көнбайыш өлөшөн агрессив Төньяҡ атлантик блокка ылыҡтырыуҙың [illegible]

[illegible] менән ҡаршыланы. Күп һандағы митингыларҙа, йыйылыштарҙа протест тауыштары яңғыраны. «Беҙ үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы асыҡтан-асыҡ боҙоуға буйһонорға уйламайбыҙ», — тип белдерҙеләр Оберхаузен ҡалаһындағы митингыла ҡатнашыусылар. «Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы көрәште беҙ еңеү менән тамамларға тантаналы һүҙ бирәбеҙ», — тип яҙалар Харке ҡалаһының халҡы Бонн «хөкүмәтенә» яҙған хатта.

Халҡтан һорау үткәреү буйынса үҙәк комитет Көнбайыш Германия халҡына халҡтан һорауҙы үткәреү тураһындағы талапты яҡларға саҡырып мөрәжәғәт итте. Урындағы комитеттәр был саҡырыуҙы күтәреп алдылар. һәм ремилитаризациялау һәм тыныслыҡ договоры тураһындағы мәсьәлә буйынса Көнбайыш Германияла плебисцит факт булып әүерелде.

Халҡтан һорауҙың барышы турында Көнбайыш Германияның төрлө райондарынан һәм Берлиндең көнбайыш секторҙарынан алынған беренсе мәғлүмәттәр әһәмиәте яғынан был тарихи хәрәкәттә немец халҡының ҙур уңышы турында һөйләйҙәр.

Көнбайыш Германия халҡының киң массаһы халҡтан һорау алыуҙа ҡатнашып, ҙур активлеҡ күрһәтә. Тауыш биреүҙә ҡатнашыусыларҙың ҙур күпселеге ҡуйылған һорауҙарға ыңғай яуап бирә. Улар Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда Германия менән тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн сығыш яһайҙар.

Көнбайыш Германияла башланған халҡтан һорау алыуҙың политик әһәмиәте һис шикһеҙ бик ҙур. Ул тыныслыҡ өсөн көрәштә Көнбайыш Германия халҡының иң төрлө ҡатламдарын туплауға булышлыҡ итә, хеҙмәтсән массаларҙың берҙәмлеген нығыта, бөтә халҡты берҙәм милли хәрәкәткә берләштерә.

Америка-Англия империалистары немец халҡын тарҡатырға ынтылдылар. Ләкин тыныслыҡҡа һәм берҙәмлеккә ихтыярлы халҡ был тарҡатыуҙы бөтәрә.

Германия демократик республикаһы территорияһында халҡтан һорау башлау 3 июнгә билдәләнелгән. Шулай итеп, яҡын араларҙа ремилитаризация һәм тыныслыҡ договоры турындағы мәсьәлә буйынса плебисцит бөтә Германияла йәйелдереләсәк.

Шулай итеп, немец халҡы тыныслыҡ һөйөүсе халҡтарҙың дөйөм эшенә ҙур вклад индерәсәк. Германияның көнбайыш өлөшөн үҙ авантюраларының ҡоралына әүерелдерергә уйлаусы һуғыш тоҡандырыусыларға немец халҡы ҡырҡа отпор бирергә әҙер тороуын бөтә донъяға иштетерлек итеп белдерәсәк.

В. Линецкий.

Шахмат буйынса донъяла беренселек өсөн матч донъя чемпионы Ботвинниктең еңеүе менән тамамланды.

Һүрәттә: (һулда) — шахмат буйынса донъя чемпионы М. Ботвинник һәм (уңда) — матчта ҡатнашыусы Д. Бронштейн уйын ваҡытында.

Н. Киреев фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Шахмат буйынса донъяла беренселек өсөн

Ботвинник донъя чемпионы исемен һаҡлап ҡалды

11 майҙа Чайковский исемендәге концерт залында Ботвинник — Бронштейн матчының һуңғы 24-се партияһы уйналды. Был осрашыуға ҡаршы яҡтарҙың икеһе лә берҙәй үк һандағы очколар менән килделәр. Донъяла беренселек өсөн көрәш тарихында бындай көсөргәнешле хәлдең булғаны юҡ ине әле.

Ботвинникка донъя чемпионының почетлы исемен һаҡлап ҡалыу өсөн ярыш шарттары буйынса ничье яһау ҙа етә ине. Аҡтар менән уйнаусы Бронштейнға был исемде яулап алыу өсөн отырға кәрәк ине.

Ботвинник аҡтарҙың саҡырыуын ҡыйыу ҡабул итте һәм славян яҡлауында үҙ исеме менән атап йөрөтөлгән системаны һайлап алды. Был вариант — хәҙерге заман шахмат теорияһында иң ҡатмарлы һәм көсөргәнешле вариант ул. 6-сы йөрөүҙә Бронштейн Ботвинник системаһының төп дауамынан тайпылды; 4-се йөрөштән һуң аҡтар пешка ҡорбан иттеләр, шуның менән ҡараларҙы уйын үҫешендә уҙып киттеләр.

Аҡтарҙың атакаһы дәһшәтле үҫә барҙы; Ботвинник, артыҡ пешканы һаҡлаған хәлдә, һалҡын ҡанлылыҡ менән үҙ позицияһын яҡлауҙы дауам итте. Тегеһе лә һәм быныһы ла уйлау өсөн күп ваҡыт үҙҙырыуҙы талап итте. Шуны әйтеүҙә етә, Ботвинник 6-сы йөрөштә 23 минут, ә Бронштейн 15-се йөрөштә—40 минут уйланы.

19-сы йөрөштә көсөргәнеш көсәйҙе. Аҡтарҙың уңышһыҙ йөрөүенә яуап итеп, Ботвинник слон өсөн ладьяны ваҡытлы ҡорбан итте. Унан һуң ҡаралар сифат яғынан отҡолар һәм атакалаусы төп фигураларҙы алмашыу айҡанлы аҡтарҙың инициативаһы бөттө.

22-се йөрөштә һәр ике яҡтың да пешканан башҡа, берәр ферзь, ладья, слон һәм аты ҡалды. Ботвинниктең артыҡ пешкаһы бар ине һәм артабан алыштыу һәм ябайлаштырыуҙар ҡотолғоһоҙ ине. Ҡараларҙың өҫтөнлөгө күренеп тора ине, һәм ошо моментта Бронштейн Ботвинниктең тәҡдиме буйынса ничьяға риза булды.

Шулай итеп, донъя чемпионы Ботвинник менән был исемгә дәғүә итеүсе Бронштейн араһында шахмат буйынса донъяла беренселек өсөн матч 12 : 12 иҫәбе менән ничья булып тамамланды. Матч шарттары буйынса донъя чемпионы Ботвинник үҙ исемен һаҡлап ҡалды.

(ТАСС).

Тамамланған матч турында донъя чемпионы М. Ботвинник

Матч тамамланғандан һуң матбуғат вәкилдәре менән беседала шахмат буйынса донъя чемпионы М. Ботвинник былай тип белдерҙе:

— Тамамланған матчтың гүзәл үҙенсәлеге шунда: унда ҡатнашыусыларҙың икеһе лә — СССР граждандары. Мин ярыштың спортив һөҙөмтәләре менән, гәрсә байтаҡ яҡшыраҡ уйнай алырлығым булһа ла, ҡәнәғәтмен.

Гроссмейстер Бронштейндең уйнауы иң юғары танылыуға лайыҡлы. Бронштейн —яҡшы практик. Ул партияны бик яҡшы башлай һәм был уға шунда уҡ инициативаны алыуға мөмкинлек бирә. Партияның аҙағын Бронштейн йомшағыраҡ уйнай.

Мин был матчта үҙемдең иң яҡшы партиям итеп 12-се партияны иҫәпләйем. Ауыр хәлдә мин еңеүгә өлгәшә алдым.

Минең ижади пландарым ниндәйҙәр?

Мин матчтың партияларын ентекләп анализларға теләйем. Яҙ үткәндән һуң осрашыуҙарға тағы ла әҙерләнәсәкмен. Шахмат буйынса Советтар Союзында беренселек өсөн турнирға ҡатнашырмын, тип ышанам.

(ТАСС).

Исландия посланнигы Х. Брием әфәндене В. А. Зориндең ҡабул итеүе

Исландияның СССР-ҙағы Ғәҙәттән Тыш Посланнигы һәм Тулы Хоҡуҡлы Министры Х. Брием әфәнде СССР Верховный Советы Президиумы Председателенә үҙенең ышаныс грамоталарын тапшырыу алдынан ошо айҡанлы 11 майҙа уны СССР Сит Ил Эштәре Министрының Урынбаҫары В. А. Зорин ҡабул итте.

(ТАСС).

353 мең һум отош түләнде

Заем облигациялары тотоусыларының отоштарын тикшереү Өфө ҡалаһы [...] районындағы 61-се номерлы Үҙәк [...] лыҡ кассаһында ойошҡанлыҡ [...] бара.

Был касса СССР халҡ хужалығын [...] аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең [...] государство заемының һуңғы отош тиражы буйынса ике көн эсендә [...] мең һум отош аҡсаһы түләне. Шул [...] тән ике кеше унар мең һум, бер кеше [...] мең һум отто.

Пландан тыш 200 центнер һөт тапшырылды

Стәрлетамаҡ орлоҡсолоҡ совхозы [...] сударствоға һөт тапшырыуҙың беренсе квартал планын 28 мартта уҡ 130 [...] центкә үтәне. Совхоздың малсылыҡ [...] ботниктәре, апрель айы заданиеһен [...] апрелгә үтәп, государствоға пландан [...] 200 центнер һөт тапшырҙылар.

Һыйыр һауыусы В. Кононова, В. А[...] кина, К. Доброва иптәштәр һыйырҙарҙан һөт һауып алыуҙың көндәлек нормаһын 170—190 процентҡа үтәйҙәр.

Н. Ширяев.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Баймаҡ. Сибай МТС-ы директоры [...] механизаторҙар кадрҙары әҙерләүгә [...] иғтибар бирә. МТС быйыл 12 тракторист, быйыл 18 тракторист әҙерләп сығарҙы. Хәҙер был трактористар ошо МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа Иван Бу[...] өлгәһендә эшләйҙәр.

Б. Диляев.

* * *

Күптән түгел Маҡар район культура йорто бинаһында «Уҡытыусылар [...]» үткәрелде. Унда 400-гә яҡын уҡытыусы ҡатнашты. Бында район мәғариф бүлеге мөдире иптәш Ямалетдинов «Уҡыу йылын уңышлы тамамлау өсөн» тигән темаға доклад менән сығыш яһаны. Был [...] һуң уҡытыусылар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Ә. Мифтахов.

* * *

Саҡмағош районы Рәжәп урта мәктәбе уҡытыусылары үткән йыл ултыртылған йәш ағастарҙы тәрбиәләүҙе ойоштороп[...]. Быйыл тағы ла 250 төп ағас ултырттылар. Хәҙер мәктәптең емеш-еләк баҡсаһы майҙаны 1,5 гектарға еткерелде. Бында алма, ҡарағат, ҡурай еләге, крыжовник ағастары үҫтерелә.

М. Ғәлиев.

* * *

Мәсетле. Оло Аҡа урта мәктәп уҡыусылары ағас ултыртыу буйынса 10 звеноға ҡушылып, мәктәп эргәһендәге баҡсаға 1000 төп ағас ултырттылар. Хәҙер был баҡсала 3000-дән артыҡ ағас үҫә. Уҙған йылдарҙа ултыртылған ағастарҙың 95 проценты үҫте. Ағастарҙы тәрбиәләүҙе балалар үҙ өҫтәренә алдылар.

Ф. Ғәлимов.

* * *

Ҡырмыҫҡалы. Фрунзе исемендәге колхоз членары үҙҙәренең көсө менән яңы тирмән төҙөп, уны 20 апрелдә эксплуатацияға тапшырҙылар. Тирмән двигатель көсө менән эшләй.

Н. Фәтхуллина.

* * *

Красноусол. Ғафури исемендәге колхозда ирекле спорт обществоһы «Большевик»тең физкультура советы төҙөлдө. Хәҙер был обществоның 26 члены бар.

Х. Надиров.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 11 май. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһы 11 майҙа, көнсығыш һәм көнбайыш фронттарҙа Халҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, айырым участкаларҙа дошмандың контратакаларын уңышлы кире ҡаҡтылар һәм йәнле көстә һәм техникала уға ҙур юғалтыуҙар яһанылар, тип хәбәр итте.

Үҙәк фронтта айырыуса үҙгәрештәр булманы.

Америка ғәскәрҙәренең Исландияны оккупациялауҙарына ҡарата

СТОКГОЛЬМ, 11 май. (ТАСС). «Ню даг» газетаһы Америка ғәскәрҙәренең Исландияны оккупациялауҙары турындағы хәбәргә баш мәҡәләлә аңлатмалар биреп, былай тип яҙа: «Исландияға ҡарата АҠШ хөкүмәте тарафынан яһалған сәйәсәт айҡанлы беҙҙең үҙ илебеҙҙә серьез ҡурҡыныс тыуҙы. Американың атом бомбалары базаһы беҙҙең сиктәребеҙҙән бик аҙ ғына алыҫлыҡта урынлаштырылған... Кореялағы һуғышты башлаусыларҙы һәләкәтлек көтә. Хәҙер улар үҙҙәренең ҡанлы, ләкин үҙҙәре өсөн файҙалы эш өсөн яңы урындар эҙләйҙәр. Швеция туранан-тура ҡурҡыныслыҡ зонаһында тора».

«Беҙҙең бигерәк тә яҡын ерҙә бәләкәй тыныс халҡҡа яһалған был һөжүм, — тип йомғаҡлай газета, — һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы көрәште тағы ла көсәйтеүҙе тыуҙырырға тейеш. Хәҙер тыныслыҡ өсөн көрәштә һәр бер көн һәм һәр бер сәғәт ҡиммәтле».

Тыныслыҡты яҡлаусыларҙың Икенсе Бөтә Индия съезының асылыуы

ДЕЛИ, 11 май. (ТАСС). Бомбейҙән хәбәр итеүҙәренә ҡарағанда, унда 11 майҙа тыныслыҡты яҡлаусыларҙың Икенсе Бөтә Индия съезы асылған.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

ПО 2479 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25 0[illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

№ 94 (8811)
1951 йыл
15 МАЙ
шишәмбе

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БӨЙӨК КОММУНИЗМ ТӨҘӨҮ ЭШЕНӘ! Ф. Саттаров. — Тормошобоҙ тағы ла матурыраҡ булыр (1-се бит).

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ (1-се бит).

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА (1-се бит).

С. Ежова. — В. И. Лениндең Үҙәк музейе (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. — Т. Әмиров. — Колхоздарға етәкселекте артабан яҡшыртыу өсөн (2-се бит).

С. Макарский. — Коммунистар яҙғы сәсеүҙә юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр (2-се бит).

Р. Мөҙәрисов. — Пропаганда, политик тәрбиәләү эшенә иғтибарҙы көсәйтергә! (2-се бит).

СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШ ПОБЕДИТЕЛДӘРЕН ҮТӘҮ ӨСӨН КӨРӘШТӘ ХӘЙБУЛЛА, БАЙМАҠ, ӘБЙӘЛИЛ ҺӘМ ПОМАРҮЖ РАЙОНДАРЫНЫҢ КОЛХОЗСЫЛАРЫ КӨҮЕК ЭШЛӘГЕҘ! Х. Әхмәтов. — Коммунистар еңеүҙә ойоштороусылар (3-сө бит).

Ф. Кирхаҙов. — Юғары урожай өсөн көрәштә (3-сө бит).

С. Ғәбитов. — Баймаҡ районы иптәшләренең ҙур еңеүе (3-сө бит).

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ. Ғ. Ибраһимов. — Баҫҡыслы һыу юлы (3-сө бит).

ДҮРТ ДЕРЖАВА СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРҘӘРЕ УРЫНБАҪАРҘАРЫНЫҢ ӘҘЕРЛЕК КӘҢӘШМӘҺЕ (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Иртә пар—юғары урожайҙың залогы

Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин [illegible] ауыл хужалығы культураларының артабан күтәреү өсөн, колхоз һәм совхоз басыуҙарының урожайлылығын күтәреү өсөн саралар күрелә. Ошо көндәлек [illegible] республикабыҙ колхоздарында ла яҙғы эштәрҙә патриотик хеҙмәт күрһәтеп, [illegible] тамамлау менән юғары урожай нигеҙе һалына.

Колхоздарҙа иртә пар һәм ҡара пар һәреүҙең яҙғы сәсеүгә ҡарағанда [illegible] — быйыл иртә пар һәреү эше [illegible]. Байымаҡ, Әбйәлил, Йомағужа, Матрай районҙарында [illegible] иртә пар һәреүҙе тамамларға [illegible] артыраҡ [illegible] мөмкинлектәр тыуҙы.

Иртә таҙа пар һәм ҡара пар һәреү — агротехника сараларының бер төрә, игенселек культураһының бер тармағы. Был эш игенселектең дөрөҫ системаһының айырылғыһыҙ бер звеноһы булып тора. Ауыл хужалығы культураларының урожайлығын күтәреүҙә, баҫыуҙарҙың ҡый үләндәре менән сүпләнеүенә ҡаршы көрәшеүҙә пар күтәреүҙең агротехник әһәмиәте бик ҙур. Быны өсөн пар ерҙәре яҙғы сәсеү менән бер үк ваҡыттарҙа, кәмендә 22 сантиметр тәрәнлектә предплужникле һабандар менән һөрөлергә, һөрөнтө ҡатламын тәрәнәйтеү менән бер үк ваҡытта минераль һәм органик ашламалар индерелергә, йәйге осорҙа кәмендә [illegible] тапҡыр эшкәртелергә тейеш. Шуның менән бергә, пар ерен эшкәрткәндә тупраҡ һәм тәбиғи шарттарҙан сығып эш итергә кәрәк.

Пар—урожайҙы күтәреүҙең мөһим резерве ул. Иртә срокта ҙа, агротехника кәндә һөрөлгән, ашламалар индерелгән һәм яҡшы эшкәртелгән пар майҙаны еңәмә урожай алыуҙы тәьмин итә. Өфө һәм Бөрө тәжрибә баҫыуҙары ашламалар индереп 25 сантиметр тәрәнлектә һөрөлгән иртә пар ерҙәрендәге арыштың һәр гектарынан 2,7—4,5 центнер өҫтәмә урожай алырға мөмкин икәнлеген күрһәттеләр.

Иртә таҙа пар һөрөүҙең сифатына ныҡ иғтибар итеү менән бергә, уның срогында үтәлеүен дә тәьмин итергә кәрәк. Һөрөү 10 июндән дә һуңламайынса тамамланырға тейеш. Иртә таҙа парҙың юғары агротехник сифатын тәьмин итеү өсөн, уны май айында уҡ һөрөп ҡалдырыу тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ.

Пар һөрөүҙә үҙған йылдарҙа айырым МТС-тарҙың етәкселәре был эште баһалап еткермәнеләр, уның агротехник сроктарҙа үткәрелеүен тәьмин итмәнеләр, һай һәм предплужникһеҙ һабан менән һөрөүгә юл ҡуйҙылар, тупраҡҡа ашламалар тейешенсә индерелмәне, йәйге осорҙа парҙар яҡшылап тәрбиәләнмәне. Мәҫәлән, Архангель, Балтач, Тәтешле һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың күпселек колхоздарында пар баҫыуҙарын көтәүлек өсөн файҙаланырға теләп, уны һөрөүҙе һуңлаттылар; Мишкә, Бөҙәҙ һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың айырым колхоздарында йәйге осорҙа тәрбиәләмәү арҡаһында пар баҫыуҙарын ҡый үләндәре баҫты. Бөтә был һәм шуға оҡшаш башҡа етешһеҙлектәр пар баҫыуҙарының сифатының түбәнәйеүенә, унда үҫтерелгән культуралардан түбән урожай алыуға килтерҙе.

Колхоз, совхоз һәм МТС, ЛЗС етәкселәре был етешһеҙлектәрҙән үҙҙәренә тейешле һығымта яһарға, быйыл пар һөрөү эшен яҡшы ойошторорға тейештәр. Һәр бер колхозда һәм совхозда сәсеүҙән бушаған бөтә йәнле тартыу көстәрен һәм тракторҙарҙы пар һөрөүгә ҡушырға, колхозсыларҙың һәм механизаторҙарҙың ике сменала эшләүҙәрен ойошторорға, улар араһында социалистик ярышты йәйелдереү кәрәк. Пар һөрөүҙе һәүбәтселеккә юл ҡуйырға ярамай. Ул яҙғы баҫыу эштәре менән бер үк ваҡытта алып барылырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта пар баҫыуҙарына ашламалар индереүҙе ойоштороу, был маҡсатта махсус кешеләр һәм йөклө тартыу көстәре бүлеп [illegible] тейеш.

Быйыл пар күтәреүҙә МТС-тар төп роль уйнай. Республикабыҙ колхозҙарында бөтә пар майҙанының 90 процентын күберәге тракторҙар менән һөрөлергә тейеш. МТС етәкселәре һәм механизаторҙары [illegible] тракторҙарҙы [illegible] тулыһынса [illegible] эшләтергә тейештәр. [illegible] техника ярҙамы [illegible] МТС-тарҙың [illegible] графиге буйынса эшләүҙәрен ойоштороу [illegible] тракторҙарҙың тулы көсө менән эшләүе [illegible].

Алдынғы механизаторҙарҙың баҫыу эштәрендәге уңыштары ойоштороу эшенең яҡшы ҡуйылыуына бәйләнгән. Ҡандра районы Ҡарамалы Ғөбәй МТС-ы механизаторҙары, яҙғы сәсеүҙәге кеүек үк, пар һөрөүҙә лә сәғәт графиге буйынса эшләйҙәр. Бында СТЗ—НАТИ һәм ДТ—54 тракторҙары менән һәр сменала 8-10 гектар ер һөрелә. МТС-тың күпселек трактор бригадалары үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа пар һөрөү планын тулыһынса үтәнеләр. Был МТС-та пар һөрөү планы 40 процентҡа үтәлде инде. Әбйәлил, Маҡар, Байҡы МТС-тарында ла пар һөрөү эше уңышлы алып барыла.

Алдынғы райондар, атап әйткәндә, Хәйбулла, Әбйәлил, Ҡандра, Дәүләкән райондары пар һөрөүҙе яҙғы баҫыу эштәре менән бер үк ваҡытта ойошторҙолар. Хәйбулла районының Һаҡмар, Әбйәлил районының Әлмөхәмәт һәм Әбйәлил МТС-тары иртә пар һөрөү планын үтәү өсөн ныҡышмалы көрәшәләр. Ләкин яҙғы культуралар сәсеүҙе тамамлаған ҡайһы бер МТС-тарҙа пар һөрөү эшен киң йәйелдермәнеләр әле. Баймаҡ МТС-ы ошо көнгә тиклем бер генә гектар ҙа пар һөрмәгән. Сибай МТС-ында ла был эшкә әле булһа ныҡлап тотонмағандар. Йомағужа районының Хоҙайбирҙин һәм Подгорный МТС-тары ла пар һөрөүҙе сиктән тыш насар алып баралар. Мәләүез, Шишмә һәм башҡа ҡайһы бер МТС-тар яҙғы һөрөүҙе тамамлаһалар ҙа, пар һөрөүгә башламағандар.

Эштең былай оҙаҡҡа һуҙылыуында төп сәбәп тракторҙарҙың тулы ҡеүәтендә файҙаланылмауында. Күнләк, Сибай, Мишкә һәм башҡа ҡайһы бер МТС-тарҙа тракторҙар техник төҙөк булмау арҡаһында бик йыш эшләмәй ултыралар. Шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Өйөнсө һәм башҡа МТС-тарҙың етәкселәре лә сәсеүҙән бушаған тракторҙарҙы тиҙерәк пар һөрөүгә күсереү сараларын күрмәйҙәр.

Йылайыр, Йәнгел һәм Дмитриевка совхоздары пар һөрөү планын 60—80 процентҡа үтәгән саҡта, бер үк шарттарҙа эшләгән Раевка һәм Мәғүт совхоздары бер гектар ҙа пар һөрмәгәндәр әле.

Колхоздарҙа йәнле тартыу көстәре менән дә пар һөрөү ойошторорға тейеш. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күпселек колхоздарҙың етәкселәре был эшкә аттар һәм һабансылар бүлмәйҙәр.

Хәҙер бурыс — яҙғы сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауҙы ойоштороу менән бер үк ваҡытта, иртә таҙа пар һөрөүҙе киң йәйелдереп ебәреүҙән һәм уның планын май айында үтәүҙе тәьмин итеүҙән тора. Колхоз, совхоз һәм МТС, ЛЗС етәкселәре, район ауыл хужалығы бүлектәре пар һөрөү һәм уны эшкәртеү эшенә оператив етәкселек итергә тейештәр. Урындарҙағы партия һәм совет ойошмалары был эшкә даими контроль ҡуйырға бурыслылар.

Игенселектең үҫән баҫыуҙы сәсеү әйләнешен үҙләштереүҙә пар һөрөүҙең государство әһәмиәтле эш булып тороуын иҫтә тоторға, был сараның һәр бер колхозда һәм совхозда үҙ ваҡытында, яҡшы сифатлы итеп башҡарылыуына өлгәшергә кәрәк.

Тимер юлы, промышленность работниктәре һәм уҡытыусыларҙы ордендәр һәм медалдәр менән наградлау

Ошо көндәрҙә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе иптәш Ф. З. Заһафуранов Стәрлетамаҡ ҡалаһының тимер юл транспортында, промышленносте һәм халыҡ мағарифе өлкәһендә оҙаҡ йылдар буйы яҡшы эшләгән өсөн наградланыусыларҙың ҙур төркөмөнә СССР ордендәрен һәм медалдәрен тапшырҙы.

Ленин ордене менән 10 кеше, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән — 6, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» медале менән — 41, «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медале менән 80 кеше наградланды.

Наградланыусылар исемдән сығыш яһаусылар тимер юлсылар, промышленность работниктәре һәм уҡытыусылар тураһында атайҙарса хәстәрлек күргән өсөн партияға, хөкүмәткә һәм иптәш Сталинға ҡайнар рәхмәт белдерҙеләр, наградланыусыларҙы хеҙмәт етештереүсәнлеген тағы ла юғарыраҡ күтәрергә һәм социалистик ярышты киңерәк йәйелдерергә саҡырҙылар.

Иптәш Ф. З. Заһафуранов наградланыусыларҙы юғары наградалар алыу менән ҡотлаһы һәм эштә артабан уңыш теләне.

Ҙур күтәренкелек менән бөйөк Сталинға ҡотлау хаты ҡабул ителде.

Бөйөк коммунизм төҙөү эшенә!

ЯҢЫ ЗАЕМДЫҢ УҢЫШЫ

☆

Республикабыҙҙың ҡалаларында һәм ауылдарында яңы заемдың уңышлы урынлаштырылыуы тураһында мәғлүмәттәр килеүҙә дауам итә.

Заем урынлаштырыу буйынса ҡалалар араһында Белорет, Стәрлетамаҡ ҡалалары һәм Өфө ҡалаһының Ленин, Киров райондары алғы сафта баралар.

Ауыл ерҙәрендә яңы заемға яҙылыу шулай уҡ ойошҡанлыҡ менән бара. Колхоз крәҫтиәндәре яңы заемға яҙылыу менән бергә подписка суммаларын аҡсалата индерәләр. Матрай районында заем айырыуса ҙур берҙәмлек менән урынлаштырылды. Колхозсылар нигеҙҙә заемға яҙылып бөттөләр. Бында подписка суммаларының 76 проценты аҡсалата индерелде лә инде.

Подписка суммаларын аҡсалата индереү темпы көндән-көн арта бара. Баймаҡ, Бөрйән, Бөҙәйәҙ Саҡмағош, Шишмә, Маҡар, Хәйбулла районы хеҙмәтсәндәре подписка суммаларын аҡсалата индереүҙә яҡшы өлгө күрһәтәләр.

Яңы заемға яҙылыу ҙур ойошҡанлыҡ менән дауам итә.

☆

Алдынғылар сафында

Юғары Йәркәй. (Телефон аша). Илеш районы хеҙмәтсәндәре СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство заемы сығарылыуы тураһындағы хәбәрҙе бик шатланып ҡаршы алдылар. Колхоз ауылының эшсәндәре государствобыҙға үтескә үҙ һаҡлыҡ аҡсаларын ҙур рух күтәренкелеге менән бирәләр.

Подписка Илеш, Исәмәт, Иштирәк, Ишҡар, Юғары Манчар ауыл Советтәрендә айырыуса ойошҡанлыҡ менән үтте. Күп колхозсылар шунда уҡ аҡсаларын түләнеләр.

С. Авзалов.

Ысын күнелдән

Бишбүләк. СССР халыҡ хужалығын үҫтереү заемы райондың хеҙмәтсәндәре араһында киң популярлек менән файҙалана. Эшселәр, колхозсылар һәм совет интеллигенцияһы уға, үткән йылғыға ҡарағанда, байтаҡ күберәк суммаға яҙылалар.

Базлыҡ ауыл Советенең М. Горький исемендәге колхозында булып үткән йыйылышта сығыш яһаусы Ватан һуғышы инвалиде иптәш И. Әхмәтшин түбәндәгеләрҙе әйтте:

—Тыуған илебеҙ тағы ла байыраҡ, матурыраҡ һәм ҡеүәтлерәк булһын өсөн мин государствоға үҙ һаҡлыҡтарымды ысын күнелдән бирәм һәм яҙылған сумманы хәҙер үк индерәм.

Был колхозда колхозсылар үҙҙәренең яҙылған суммаларының 40 процентын аҡсалата түләнеләр.

Елбуләк-Матвеевка ауыл Советендә заем урынлаштырыу бер-ике сәғәт эсендә тамамланды.

А. Петров,
А. Баниев.

Тормошобоҙ тағы ла матурыраҡ булыр

Ҡырмыҫҡалы. (Телефон аша). Райондың хеҙмәтсәндәре араһында яңы Государство заемына яҙылыу ҙур политик күтәренкелек менән үтә. Сәхәй, Биштәкә ауыл Советтәрендә, шәкәр заводында, Ҡырмыҫҡалы урта мәктәбендә подписка тәүге бер нисә сәғәт эсендә үк тамамланды.

Биштәкә ауыл Советы Шәймөратов исемендәге колхоз председателе иптәш Кусюмов заемға яҙылған сағында былай тине:

— Беҙ заемға бөтәбеҙ ҙә бер кешеләй булып яҙылабыҙ. Сөнки беҙҙең заемдарыбыҙ халыҡтың тормошон артабан яҡшыртыуға, яңы завод, фабрикалар, мәктәптәр, больницалар төҙөүгә китә.

Иптәш Кусюмов ике мең һумға яҙылып, дүрт йөҙ һумын шунда уҡ түләне. 85 йәшлек ҡарт, колхозсы Хәбир Ғәлимов яҙылған сумманың күп өлөшөн аҡсалата индерҙе.

Ҡырмыҫҡалы урта мәктәбенең уҡытыусылары заемға алты аҙналыҡ эш хаҡтары күләмендә яҙылдылар һәм уның бер өлөшөн шунда уҡ индерҙеләр.

Районда заем уңышлы урынлаштырылды. Колхоз ауылы эшсәндәре халыҡ хужалығының үҫеш темпын тиҙләтеүгә булышлыҡ итеү маҡсатында подписка суммаларын тиҙерәк индерергә тырышалар. Бөгөнгә көндә район күләмендә таратылған заем суммаһының 37 процентынан күберәге аҡсалата индерелде инде.

Ф. Саттаров.

Колхозсыларҙың вклады

Иглин районының Ҡарамалы ауыл Советында яңы заемға яҙылыу уңышлы бара. Күп кенә колхозсылар ҙур суммаларға яҙылып, взностарын индерҙеләр. Ауыл Советы күләмендә яҙылған сумманың өстән бер өлөшө аҡсалата индерелде лә инде. Район Советы депутаты һәм ауыл Советы председателе иптәш Ҡудаяров яңы заемды урынлаштырыуҙы районда өлгөлө итеп ойошторҙо.

Ватан һуғышы инвалиде иптәш Насиров председатель булып эшләгән Үкгәй ауыл Советында ла яңы заемға яҙылыу уңышлы дауам итә. Киров исемендәге һәм «Родина» колхоздарындағы бөтә колхозсылар ҙа бер кешеләй булып яңы заемға яҙылдылар. Ауыл Советының бюджет комиссияһы председателе иптәш Ғиниәтуллин заем таратыуҙа яҡшы эшләне. Колхозсылар араһында заем таратыуҙа агитаторҙарҙан Вахитова, Саниева, Еникиев, Нураева һәм башҡа иптәштәр киң аңлатыу эштәре алып баралар.

Халыҡ бәхете өсөн

Октябрьский ҡалаһының нефтселәре яңы заемға күтәренке күңел, ҙур ойошҡанлыҡ менән яҙылалар.

«Туймазынефть» тресының 2-се номерле транспорт конторасы эшселәре бер айлыҡ һәм ай ярымлыҡ эш хаҡы күләмендә заемға яҙылып, халыҡ бәхете өсөн үҙҙәренең вкладтарын индерҙеләр.

Яңы заемға шулай уҡ уңышлы номерле монтаж управлениеһе, «Башзападнефтеразведка» тресы предприятиелары, икенсе номерле төҙөлөш-монтаж управлениеһы коллективтары шулай уҡ ҙур берҙәмлек менән яҙылдылар.

Яңы заемға яҙылыу бөтә нефтселәр араһында ҙур күтәренкелек менән бара.

Ғ. Үлмәсов.

Ҙур берҙәмлек менән

Саҡмағош. (Телефон аша). Район хеҙмәтсәндәре хөкүмәтебеҙҙең яңы Государство заемы сығарыу тураһындағы ҡарарын ҙур ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршы алдылар.

Тайнаш колхозының алдынғы члены иптәш З. Нуриәлиева заемға яҙылғанда былай тине:

— Хөкүмәтебеҙҙең яңы заем сығарыу тураһындағы ҡарарын ысын күңелдән хуплап ҡаршы алам. Беҙҙең государствоға биргән аҡсаларыбыҙ Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан үҫтереү, коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрен тиҙерәк тамамлау һәм хеҙмәтсәндәрҙең культура көн-күрешен тағы ла яҡшыртыу өсөн китә. Мин яңы заемға ҙур шатлыҡ менән яҙылам.

Был ауыл Советында хеҙмәтсәндәрҙең бөтәһе лә бер көнөлдән заемға яҙылдылар. Ауыл Советы буйынса үткәрелгән подписка суммаһының 38 меңе шунда уҡ аҡсалата индерелде.

Балтач, Ҡара Ерек, Рапат ауыл Советтәрендә лә заемға яҙылыу ҙур берҙәмлек менән үтте.

Х. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

ХЕҘМӘТСӘНДӘРҘЕҢ АКТИВЛЕГЕ

Туймазы районының предприятиеларендә, учреждениеларендә, колхоз, совхоз һәм МТС-тарында яңы заем таратыу уңышлы бара. Хеҙмәтсәндәр СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство заемын сығарыу тураһында совет хөкүмәтенең ҡарарын ысын күңелдән хуплағанлыҡтарын белдерҙеләр.

Суҡасылыҡ совхозы эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәренең митингеһендә сығыш яһаусы бригадир иптәш Щербаков былай тине:

— Яңы государство заемын сығарыу тураһындағы ҡарарҙы бөтә йөрәктән хуплайым һәм заемға ҙур шатлыҡ менән яҙылам.

Бында сусҡа ҡараусы Борбина, зоотехник Ғәләмова, ауыл Советы депутаты Павлова, бригадир Щербаков иптәштәр беренсе булып яҙылдылар.

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ

Трактор бригадаһының уңышы

Бәләбәй районы Үсень-Ивановка МТС-ының 14-се номерле трактор бригадаһы (бригадиры иптәш Трусилин) яҙғы сәсеү эштәрен уңышлы тамамланы.

Бригадалағы тракторҙар һәм тағылма машиналар тулы ҡеүәтендә файҙаланылды, буш тороуға юл ҡуйылманы. Сәсеүҙә өс агрегат көн һайын, 120 гектар урынына, 180—190 гектар ашлыҡ сәсте. Бригадала шартлы һәр бер тракторға 165,7 гектар ер эшкәртелде. Яҙғы осорҙа бөтәһе 2774 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһалды.

Трактористарҙан В. Столбов, Я. Бубнов, Е. Неклеенова, М. Трусилина иптәштәр смена нормаларын 1,5—1,75 тапҡырға арттырып үтәнеләр. Хәҙер механизаторҙар пар һөрәләр. 350 гектар пар һөрөлдө лә инде. Бригада пар һөрөү планын 20 майға үтәү өсөн көрәшә.

И. Абдуллин.

Маҡар МТС-ы коллективе яҙғы баҫыу эштәре планын арттырып үтәне

Маҡар МТС-ы коллективе (директоры иптәш Мырҙағәлиев) яҙғы баҫыу эштәре башланыу менән тракторҙарҙың көндөҙгө сменаларҙа ғына түгел, төнгө сменаларҙа ла туҡтауһыҙ эшләүҙәренә ныҡ иғтибар бирҙе. Колхоздарҙа тракторҙарҙың төнгө смена эштәренә махсус контроль алып барылды.

Һәҙәмтәле машиналарҙың етештереүсәнлеге ныҡ күтәрелде. МТС 9 майға яҙғы баҫыу эштәре планын 100,2 процентҡа үтәне. Ужымдарҙы тырматыу, туңға һөрөлгән ерҙәрҙе культивациялау һәм яҙғы һөрөү кеүек ауыр эш төрҙәре байтаҡ арттырылып башҡарылды. Был осорҙа шартлы һәр бер трактор менән уртаса 126-шар гектар ер эшкәртелде.

Алдынғы трактор бригадаларының эш күрһәткестәре тағы ла яҡшыраҡ. Яҙғы баҫыу эштәре планын 180 процентҡа үтәгән иптәш Василий Ковалдың трактор бригадаһы шартлы һәр бер трактор менән 190-шар гектар ер эшкәртте, 1376 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

МТС тракторҙары хәҙер пар ерҙәре һөрәләр.

Ғ. Ҡотлобаев.

Экономияланған яғыулыҡ иҫәбенә

Беҙ трактор эштәре планын бөтә эш төрҙәре буйынса ла колхоздар менән төҙөлгән договорҙа ҡаралған срокта үтәп барабыҙ. Алдынғы трактористар сәғәт графиге менән эшләйҙәр. Тракторист Закиров ҡайһы бер сменаларҙа СТЗ—НАТИ тракторы менән 31 гектар урынына 72-шәр гектар ашлыҡ сәсте. Ул үҙенең смена нормаһын һәр ваҡыт арттырып үтәй. Шул уҡ ваҡытта 200 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Алдынғы тракторист Моҙафаров экономия өсөн ярышты ойоштороусы булып тора. Ул 241 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһап, ошо яғыулыҡ менән ике ярым смена эшләне.

Л. Закиров,
Учалы МТС-ының өсөнсө номерле трактор бригадаһы бригадиры.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА

☆

ҠЫРЫМ ӨЛКӘҺЕ. Төньяҡ Ҡырым каналы трассаһы үткән районда эҙләнеү эштәре киң йәйелдерелде.

Һүрәттә: геологик партия начальнигы, тау инженеры Е. В. Львова (уңда) һәм өлкән коллектор Т. А. Галанина (һулда) иптәштәр тәүге скважинанан сығарылған грунтты ҡарайҙар.

Н. Кулешов фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

☆ ☆

СССР фәндәр Академияһы президиумында

11 майҙа академик А. Н. Несмеянов председателлегендә СССР фәндәр Академияһы президиумының ултырышы булды. Унда ватаныбыҙҙың күренекле ғалимдәре исемендәге алтын медалдәр һәм премиялар бирелде.

Президиум В. В. Докучаев исемендәге алтын медалде (1950 йыл) В. В. Докучаевтың тупраҡ һәм үҫемлектәр араһындағы һәм башҡа тәбиғи шарттар буйынса үҙ-ара бәйләнеш һәм үҙ-ара бойондороҡлолоҡ тураһындағы ғилми идеяларын ижади үҫтергәне өсөн, шулай уҡ баҫыу һаҡлауҫы ағастарҙы үрсетеүҙә ғилми эштәре өсөн академик В. Н. Сукачевҡа бирергә ҡарар итте.

Академик В. Н. Сукачев унарлаған йыл инде беҙҙең илебеҙҙең төрлө тәбиғи шарттарындағы үҫемлектәрҙе һәм тупраҡты өйрәнеү өҫтөндә эш алып бара. Көнбайыш Себерҙең тундраларындағы һәм тайга райондарындағы үҫемлектәренә һәм тупрағына арналған уның хеҙмәттәре, тупраҡты өйрәнеү буйынса совет фәнен үҫтереү өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булып тора.

Шулай уҡ В. В. Докучаев исемендәге премиялар ҙа бирелде (1951 йыл). Был премия Украина ССР-ы фәндәр Академияһы сотрудниктәре авторҙар коллективына: «Украина ССР-ының тупраҡ картаһы» һәм «Украина ССР-ының тупрағы» тигән хеҙмәттәре өсөн бирелде. Уларҙың был хеҙмәттәрендә бөтә Украина тупрағының агрономик характеристикаһы буйынса булған киң тикшеренеү материалдары дөйөмләштерелгән.

Президиум И. И. Мечников исемендәге алтын медалде (1951 йыл) автальмология һәм дәйем хирургия өлкәһендәге күренекле хеҙмәттәре өсөн СССР медицина фәндәре Академияһының действительный члены В. П. Филатовҡа бирергә ҡарар итте. СССР медицина фәндәре Академияһының член-корреспонденте П. А. Петришеваға һәм СССР медицина фәндәре Академияһының член-корреспонденте Н. А. Красильниковҡа И. И. Мечников исемендәге премия (1951 йыл) бирелде.

Яңы урмандар

Быйыл ҙа Молдавия ССР-ы колхоздарының ерҙәрендә, соҡорло урындарында һәм баҫыу сиктәрендә биш мең гектар самаһы төрлө ағастар ултыртылды. Молдавияның колхоздары академик Т. Д. Лысенконың методы буйынса 80 тонна грек сатләүегенең оя яһау ысулы менән сәстеләр.

Республиканың 26 районы ағас ултыртыу пландарын арттырып үтәне. Хәҙер Молдавия колхоздарында яңы урман майҙандары 13 мең гектарға етә. Ауылдарҙа 300 ағас питомниктәре булдырылды.

☆

ИВАНОВО ӨЛКӘҺЕ. Яңы Иваново мануфактура фабрикаһы коллективы коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре заказдарын үтәүҙә фидаҡәр хеҙмәт итә. Төҙөлөштәрҙе хеҙмәтләндереүсе сауҙа предприятиелары адресына бик күп һанда матур, яҡшы сифатлы туҡымалар ебәрелә.

Һүрәттә: биҙәкләү фабрикаһының иң яҡшы браковщицаһы, комсомол группоргы К. А. Устинова яңы төҙөлөштәргә ебәреләсәк туҡымаларҙы тикшерә.

Ф. Карышев фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

В. И. ЛЕНИНДЕҢ ҮҘӘК МУЗЕЙЕ

В. И. Лениндең Үҙәк Музейена 15 йыл тулыуға ҡарата.
Мәскәү. Революция майҙанында В. И. Ленин Үҙәк Музейеның бинаһы.

Н. Грановский фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Иптәш И. В. Сталиндең инициативаһы һәм күрһәтмәһе буйынса 1936 йылдың 15 майында Мәскәүҙә В. И. Лениндең Үҙәк Музейе — бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең бөйөк юлбашсыһы һәм уҡытыусыһы музейы асылыуына бөгөн 15 йыл тулды.

Музейҙең бай материалдары коммунистар партияһының ойоштороусыһы һәм бөйөк юлбашсыһы — донъяла беренсе Совет государствоһын төҙөүсе — Владимир Ильич Лениндең тормошон һәм эшмәкәрлеген сағылдыра.

Музей — ленинизм идеяларын пропагандалауҙың иң ҙур үҙәктәренең береһе, большевиктар партияһының героик тарихын өйрәнеүҙә ярҙам итеүсе бөтә халыҡ мәктәбе ул. Уны Советтар Союзы халыҡтарының һәм бөтә прогрессив кешелектең донъяһының күп кешеләре файҙалана. 15 йыл эсендә музейҙе 11 миллион самаһы кеше булған.

Музейҙең 22 залына 7 меңгә яҡын документ ҡуйылған. Бында В. И. Ленин менән И. В. Сталиндең һирәк осрай торған ҡулъяҙмалары, уларҙың хеҙмәттәренең беренсе баҫмалары, В. И. Лениндең шәхси әйберҙәре йыйылған.

Музейҙең күп һанлы документтары хеҙмәтсәндәрҙең иң бөйөк юлбашсылары — Ленин менән Сталиндең дуҫлығын сағылдыралар.

Беренсе залға йыйылған экспонаттар Владимир Ильичтың балалыҡ һәм йәшлек йылдары, уның марксист булып формалашыуы тураһында һөйләйҙәр. Беҙ бында Лениндең мәктәп йылдарында уҡыған китаптарын күрәбеҙ. ...Бында уҡ йәш Лениндың Симбир гимназияһын тамамлағас бирелгән алтын миҙалы ҡуйылған.

Художник Александровскийҙың «Бурлактар» тигән картинаһында Лениндең Ҡазанда студенттар сходкаһында ҡатнашыуы сағылдырылған, бында уҡ Ленин ҡулға алынған һәм Кокушкино ауылына һөргөнгә ебәрелгән.

Беренсе зал В. И. Лениндең «Крәҫтиәндәр тормошонда яңы хужалыҡ хәрәкәттәре» тигән теоретик хеҙмәтенең ҡулъяҙмаһы менән тамамлана.

Экспозиция материалдарында Ленин менән Сталиндең марксистик партияны, яңы типтағы партияны төҙөү эшендә күрһәткән бөйөк хеҙмәттәре күрһәтелгән. Был партияның пролетариат диктатураһы өсөн, социализм өсөн көрәштә еңеүе мөмкин түгел ине. Пролетариат Россияла марксистик партияны төҙөүҙе тәү сиратта халыҡсыларҙы тар-мар итеү юлында башлап ебәрҙе. Марксизмдың дошмандары халыҡсыларҙы тар-мар итеүҙә «Ниҙәр ул «халыҡ дуҫтары» һәм улар социал-демократтарға ҡаршы нисек һуғышалар» тигән Лениндең хеҙмәте ҙур роль уйнаны. Бында В. И. Лениндең «Россияла капитализмдың үҫеүе» тигән хеҙмәте лә бар.

Музейҙа И. В. Сталиндең революцион эшмәкәрлегенең башланыуын характерлаусы материалдар йыйылған. Фотоһүрәттәр һәм документтар Кавказда иптәш Сталин етәкселегендә ҙур революцион эш туралыһында һөйләйҙәр.

Лениндең «Искра»һын 1900 йылдың декабрендә баҫылып сыҡҡан беренсе номеренең төп даһаһы ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Музейҙа «Искра»нан ҡала Россияла иң яҡшы марксистик газета — иптәш Сталин тарафынан Кавказда ойош-торолған «Брдзола» газетаһы күрһәтелгән.

Тығыҙ хеҙмәттәшлек итеп, Ленин менән Сталин большевиктар партияһының идеологик, ойоштороу, тактик һәм теоретик нигеҙҙәрен эшләнеләр, уның хеҙмәтсәндәрҙе азат итеү өсөн көрәштәрен әҙерләнеләр.

Большевиктар партияһының идеологик нигеҙҙәрен Ленин «Ни эшләргә?» тигән китабында эшләне, уның төп даһаһын Музейҙа күрергә мөмкин. Бында уҡ иптәш Сталиндең «Ҡыҫҡаса партиялағы фекер айырмалыҡтары тураһында» һәм «Социал-демократия һәм милли мәсьәлә» тигән гүзәл хеҙмәте ҡуйылған.

Музейҙа В. И. Лениндең «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа» тигән хеҙмәтенең беренсе даһаһы бар, был хеҙмәттә беҙҙең партияның ойоштороу нигеҙҙәре эшләнгән. Иптәш Сталиндең Музейға ҡуйылған «Пролетариат синыфы һәм пролетариат партияһы» тигән хеҙмәте шул уҡ мәсьәләгә арналған.

Күп һанлы материалдар Ленин менән Сталиндең Россияла меньшевиктарға ҡаршы, халыҡ-ара оппортунизмға ҡаршы көрәштәрен күрһәтәләр.

Музей залдарының береһендә Музейҙа булыусыларҙың иғтибарын ике бөйөк юлбашсының — Ленин менән Сталиндең күрешеп танышыуҙарын һүрәтләүсе художник Моравовтың картинаһы йәлеп итә. Был 1905 йылдың декабрендә партияның Таммерфорс конференцияһында булды.

Ленин менән Сталин Столыпин реакцияһы йылдарында, ҡаты террор йылдарында, партияның кадрҙарын һаҡлап һәм туплап барып, бөтә антипартийный ағымдарға ҡаршы ныҡышмалы көрәштеләр. 1912 йылда Прагала конференцияһында большевиктар үҙ-аллы пролетар партияһы — яңы типтағы партия ойоштолдо.

Күп һанлы документтар, фотографиялар һәм башҡа материалдар тарихи көндәрҙә — партия, Ленин менән Сталин етәкселегендә эшселәр синыфын социалистик революцияға еңеүгә, донъяла беренсе социалистик государствоны төҙөүгә алып барыуын күрһәтәләр.

Музейҙа булыусылар Лениндең ҡулъяҙмаһы — партия Үҙәк Комитетының 1917 йылдың 10 октябрендәге ултырышында ҡабул ителгән ҡоралы восстание тураһындағы тарихи резолюцияһын күрәләр. Совет властын төҙөү тураһында бөтә донъяға хәбәр итеүсе «Россия гражданарына» мөрәжәғәте лә ҡуйылған.

Бында И. В. Сталин тарафынан яҙылған «Россия халыҡтарының хоҡуҡтар декларацияһы». Уға хеҙмәтсәндәрҙең иң бөйөк юлбашсылары — Ленин менән Сталин ҡул ҡуйған. Был — милли дошманлыҡ политикаһын бөтөрөүсе һәм Россия халыҡтарының тиң хоҡуҡлылығын һәм үҙ-ара ышаныуын урынлаштырыусы тарихи документ.

Музейҙа гражданлыҡ һуғышы һәм сит ил интервенцияһы йылдарында, шулай уҡ халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм тергеҙеү йылдарында Ленин менән Сталиндең бергәләп эшләүҙәрен асыҡ күрһәтеүсе материалдар күп.

1919 йылда Ленин халыҡты революцион эшләргә саҡырҙы. Был саҡырыуға хеҙмәтсәндәр коммунистик субботниктар ойоштороу менән яуап бирҙеләр. Ленин субботниктарҙа хеҙмәткә яңы мөнәсәбәтте, яңы, коммунистик ҡоролоштоң яралғыһын күрҙе. Был айҡанлы ул «Бөйөк башланғыс» тигән гүзәл хеҙмәтен яҙҙы, уның беренсе баҫмаһы Музейға ҡуйылған.

Большевиктар партияһының бөйөк эше еңеүенә Владимир Ильичтең ныҡлы ышаныуы, уның тимерҙәй ихтыяры һәм гигант энергияһы хеҙмәтсән массаларҙы еңелмәҫ һәм ҡаҡшамаҫ көс итеп туплаһы. Интервенттар һәм улар ярҙам иткән эске контрреволюция көстәре тар-мар ителде. Илебеҙ тыныс хужалыҡ төҙөлөшө менән шөғөлләнеү мөмкинлеген алды.

Ленин менән Сталин, тығыҙ хеҙмәттәшлек итеп, ГОЭЛРО планын — бөтә халыҡ хужалығын үҙгәртеп ҡороуҙың нигеҙҙәрен эшләнеләр. Был гүзәл план айҡанлы Владимир Ильичкә иптәш Сталин хатының ҡулъяҙмаһы музейға экспонат итеп ҡуйылған.

Ленин менән Сталин яңы экономик политиканың нигеҙҙәрен бергәләп эшләнеләр һәм уны тормошҡа ашырыу өсөн тиҫтәләп көрәш алып барҙылар.

1922 йылдың ноябрендә Мәскәү Советы пленумында яһаған сығышында В. И. Ленин: «НЭП Россияһынан социалистик Россия буласаҡ» тип белдерҙе. Был алдан күреп әйткән һүҙҙәр бөйөк Сталин етәкселегендә тормошҡа ашырылды. Беҙҙең илебеҙҙә социализм төҙөлдө; һәм Советтар Союзының халыҡтары уңышлы рәүештә коммунизмға баралар.

Музейға В. И. Лениндең һуңғы хеҙмәттәре баҫылып сыҡҡан «Правда» газетаһы номерҙәре ҡуйылған. Владимир Ильич был хеҙмәттәрендә Совет государствоһы тарафынан эшләнгән эштәргә йомғаҡ яһаны һәм артабан социализм төҙөү планын билдәләне.

Совет власының беренсе декретынан — яраштырыу тураһындағы декреттан башлап бик күп һандағы документтар Ленин менән Сталиндең тыныслыҡ өсөн, халыҡтар араһында хеҙмәттәшлек өсөн көрәшеүҙәре тураһында һөйләйҙәр.

Ленин, Америка империализмы башҡа халыҡтарҙың эшенә һәр ваҡыт тығылып килде һәм тығыла, тип бик ныҡ итеп әйтте, уның йыртҡыс йөҙөн, уның юлбаҫарлыҡ һәм агрессив юлын күрһәтте.

Музей экспозицияһының материалдарында һәм документтарында йәш совет республикаһына ҡаршы хәрби интервенцияны ойоштороусы һәм рухландырыусы булыу яғынан Америка империализмының роле асыҡ күрһәтелгән.

В. И. Ленин үҙенең сығыштарында, хаттарында һәм беседаларында бөтә донъяға хакимлек итеүгә, Азияны һәм Европаны ҡоллоҡҡа төшөрөүгә ынтылыусы Америка империализмының йыртҡыс, юлбаҫарлыҡ характерын бер нисә тапҡыр билдәләп үтте. Был документтарҙың бөтәһе лә Музей экспозицияһында бар.

Бынан 30 йылдан артыҡ элек әйтелгән ленинсе һүҙҙәр хәҙерге халыҡ-ара обстановка менән раҫлана, хәҙер Америка-Англия империалистары, бөтә донъяға хакимлек итеүгә ынтылып, тыныслыҡ һөйөүсе Корея халҡына ҡаршы ҡанлы агрессия башланылар.

В. И. Ленин Музейе ғәжәттән тыш популярлек һәм совет халҡының һөйөүе менән файҙалана, һәм Тыуған илебеҙҙең алыҫ ситтәрендә лә уны беләләр. Ленин — Сталиндең бөйөк идеялары Тыуған ил хаҡына, коммунизм төҙөү хаҡына беҙҙең халҡыбыҙҙы героик подвигтарға һәм фиҙакәр хеҙмәткә рухландыра.

С. Ежова,
В. И. Ленин Үҙәк Музейының өлкән ғилми сотрудниге.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Колхоздарға етәкселекте артабан яҡшыртыу өсөн

Ауыл хужалығы артелдәрен эреләтеү һөҙөмтәһендә уларҙың артабанғы ҡеүәтле үҫеше өсөн киң перспективалар асылды һәм ауылдағы партия-политик эш практикаһында бик күп яңылыҡтар барлыҡҡа килде. Колхоз партия ойошмаларының роле күтәрелде, улар һан һәм сифат яғынан нығынылар.

Хәҙер Учалы районының һәр бер колхоз партия ойошмаһында 15-тән алып 38-гә тиклем коммунист иҫәпләнә. Колхоз партия ойошмаларының ҙурайыуы бригадаларҙа, малсылыҡ фермаларында партия группалары төҙөргә, колхозсылар араһында массовый-политик эште яҡшыртырға, производствоның хәл иткес участкаларында коммунистарҙың көсөн дөрөҫ урынлаштырырға мөмкинлек бирҙе.

Миҫал өсөн «Ирәндек» колхозының партия ойошмаһын алырға мөмкин. Ул 30 коммунисте берләштерә. Шуларҙан 25 коммунист бригадирҙар, малсылыҡ фермаларының мөдирҙәре, сәсеүселәр, малсылыҡ фермалары работниктәре булып туранан-тура колхоз производствоһында эшләйҙәр. Был колхоздың партия ойошмаһында 4 урында партия группалары ойошторолдо.

«Коммунар» колхозы партия ойошмаһындағы 27 коммунистең 15-е эштең айырыуса яуаплы участкаларына беркетелде. Колхоздағы партия-комсомол группаларының береһе 2 коммунистан һәм 2 комсомолецтан тора. Группаға коммунист иптәш Аллаяров етәкселек итә.

Был группа малсылыҡ работниктәре араһында хәл иткес көс булып тора, колхозсылар алдында ҙур авторитет менән файҙалана. Группа төҙөлгәндән бирле 5 йыйылыш үткәрелде. Йыйылыштарға партияһыҙ актив тә саҡырыла. Унда ферма тормошоноң көндәлек иң мөһим мәсьәләләре тикшерелә. Малсылыҡ работниктәренең үҙ вазифаларын үтәүҙә яуаплылыҡтарын арттырыу, эштең культураһын күтәреү, малдарға тәрбиәне яҡшыртыу һәм башҡа шуның кеүек мәсьәләләр партия-комсомол группаһының иғтибар үҙәгендә тора.

Был партия-комсомол группаһы малсылыҡ работниктәре араһында массовый-политик эш алып бара — лекциялар, докладтар, беседалар үткәрә, боевой листоктар сығара, производство кәңәшмәләре ойоштора. Үткәрелгән саралар малсылыҡ фермаларында эшләүселәрҙең активлеген күтәрә, уларға партия ойошмаһының йоғонтоһон көсәйтә, партия етәкселеген колхоз производствоһына яҡынайта.

Эреләтелгән колхоз партия ойошмаларының етәкселегенә яңы кәстәр, әҙерлекле коммунистар килделәр. Райком районың етәксе работниктәренән 50 коммунисте туранан-тура колхоз производствоһына ебәрҙе.

Райком һәм уның бүлектәре колхоз партия ойошмаларына етәкселекте яҡшыртыу маҡсатында бик күп мөһим саралар үткәрҙеләр. Хәҙер райком үҙ аппараты работниктәренең [illegible] партия ойошмаларына практик ярҙамын көсәйтеү өсөн квартал планы төҙөнө. Был план буйынса эш алып барыу райкомдың һәр бер работнигына теге йәки был партия ойошмаһында 10-15-әр көн буйына булып, практик ярҙам күрһәтергә мөмкинлек бирә.

Райком бюроһында колхоз партия ойошмалары секретарҙәренең отчеттарын тыңлау ҙур әһәмиәткә эйә. Һуңғы ес айҙа райком бюроһы ултырышында тейешле мәсьәләләр буйынса ундан артыҡ секретарҙәң отчеты тыңланды. Партия ойошмаһы секретаренең отчетын бюроға ҡуйырға әҙерләү буйынса был партия ойошмаһының эшен өйрәнеү һәм политик ярҙам күрһәтеү өсөн райком работниктәренән бер-ике кеше ебәрелә.

Районда колхоз партия ойошмаларының дөйөм йыйылыштарының тәрбиәүи [illegible] көсө артты. Эреләтелгән колхоз партия ойошмалары үҙ йыйылыштарында иң актуаль мәсьәләләрҙе ҡарайҙар, йыйылыштар юғары идея-политик кимәлдә үтәләр. Бигерәк тә «Ирәндек» колхозы партия ойошмаһында партия йыйылыштарының идея кимәле айҙан-айға үҫә бара. Бында йыйылыштарға яҡшылап әҙерләнәләр. Унда ҡуйыласаҡ мәсьәләләр партия бюроһында тикшерелә. Йыйылышҡа әҙерләнеү эшенә бик күп коммунистар ылыҡтырыла. Һуңғы ваҡытта бында йыйылыштарҙың көн тәртибенә күп кенә яңы мәсьәләләр ҡуйылды. Йыйылыштарҙа ферма мөдирҙәренең, бригадирҙәрҙең отчеттары тыңлана. Партия ойошмаһының асыҡ йыйылыштарына колхоз активе лә саҡырыла. Партия-политик эште яҡшы ҡуйыусы колхоз партия ойошмаларының һаны ла күбәйә бара.

Шулай ҙа эреләтелгән колхоз партия ойошмаларының ойоштороусылыҡ ролен күтәреү юнәлешендә бик күп эш эшләргә кәрәк әле. Быны өсөн бөтә партия-политик эште яңы шарттарға яраҡлаштырып ҡороу талап ителә. Колхоз партия ойошмалары алдында хәҙер яҙғы сәсеүҙе ойошҡан рәүештә үткәреүҙе тәьмин итеү, шул юл менән юғары урожайға нигеҙ һалып ҡалыу бурысы тора. Колхоз партия ойошмаларының һәм ауыл хужалығы эшсәндәренең бөтә көсө юғары урожай өсөн көрәшкә йүнәлтелгән булырға тейеш.

Т. Вәзиров,
ВКП(б) Учалы райкомының партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлеге мөдире.

Коммунистар яҙғы сәсеүҙә юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр

Беҙҙең колхоздың партия ойошмаһы яҙғы сәсеүгә әҙерлек осоронда уҡ үҙенең бөтә иғтибарын баҫыу эштәрен уңышлы үткәреүҙә колхоз етәкселегенә ярҙамды дөрөҫ ойоштороу мәсьәләһенә йүнәлтте. Был мәсьәлә партия ойошмаһының асыҡ йыйылышына ҡуйып тикшерелде. Партия йыйылышында хеҙмәт дисциплинаһын яҡшыртыу, массовый-политик эште ойоштороу саралары билдәләнелде. Партияның яҙғы баҫыу эштәре осоронда төҙөлгән эш планы раҫланды, баҫыусылыҡ бригадаларында партия-комсомол группалары төҙөлөп, коммунистар һәм комсомолецтар эштең айырыуса яуаплы участкаларына беркетелде. Партия ойошмаһында иҫәптә тороусы 18 коммунистең 14-е туранан-тура баҫыу эштәренә ебәрелде. Партия-комсомол группалары бригадирҙар менән берлектә үҙ бригадаларындағы колхозсыларҙың йыйылыштарын үткәрҙеләр. Бригада йыйылыштарында яҙғы сәсеүҙе нисек итеп ойошҡаныраҡ үткәреү мәсьәләләре яғынан тикшерелде һәм социалистик ярыш договорҙары төҙөлдө.

Партбюро агитаторҙарҙы һайлап алыу эшенә лә ҙур иғтибар бирҙе. Колхоз производствоһында алдынғы эш өлгөләре күрһәтеүсе иң яҡшы коммунистарҙан һәм комсомолецтарҙан 20 кешене эсенә алған агитколлектив ойошторолдо.

Алдынғы эш алымдарын таратыу, социалистик ярышҡа етәкселек һәм контроль урынлаштырыу маҡсатында бригаданың күсмә Ҡыҙыл Байрағы, социалистик ярыш таҡтаһы, почет таҡтаһы, алдынғыларға тапшырыу өсөн ҡыҙыл флажоктар булдырылды.

Яҙғы сәсеү осоронда массовый-политик эште киң йәйелдереүгә йүнәлтеп үткәрелгән ошо саралар баҫыу эштәренең ойошҡан рәүештә башланып китеүен һәм уңышлы барышын тәьмин иттеләр. Яҙғы сәсеүгә тәүгеһенгә тиклем уҡ трактор бригадаһының көсө менән 350 гектар майҙанда, баҫыусылыҡ бригадаларының көсө менән 680 гектар майҙанда дым ҡаплау, 120 гектар майҙанда баҫыу таҙартыу эштәре үткәрелде.

Сәсеү эштәренең тәүге көндәренән уҡ коммунистар һәм комсомолецтар юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Коммунистарҙан Ханнанов, Кулешов, комсомолецтарҙан Хәбибуллин, Нурғәлиев һәм башҡа иптәштәр көндәлек нормаларын һәр ваҡыт арттырып, эште яҡшы сифатлы итеп үтәйҙәр.

Колхозда «Сәнә» газетаһы, бригадаларҙа боевой листоктар регуляр сығарылып тора. Агитаторҙар баҫыу станларында көн һайын беседалар үткәрәләр, ҡысҡырып газета уҡыйҙар, бригадаларҙа производство кәңәшмәләре үҙғаралар. Агитацион эште Һибәтуллина, Ғирфанова, Ғәләүетдинова, Ҡотләхмәтов, Куданов һәм башҡа иптәштәр айырыуса яҡшы алып баралар.

Беҙҙең колхоз «Ударник» колхозы менән ярыша. Яҙғы сәсеү эштәре буйынса беҙ был колхоздан алда барабыҙ. Беҙҙең колхозсылар алдынғылыҡты бирмәҫ һәм [illegible] яҡшыраҡ күрһәткестәргә өлгәшеү [illegible] юғары йөкләмәләр алалар.

Колхоздың үҙендә иптәш [illegible] етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы тәүге көндәрҙә уҡ ярышта алдынғылыҡты алды һәм уға колхоздың күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды. Ҡыҙыл Байраҡты үҙендә һаҡлау өсөн бригада [illegible] темпын тағы ла көсәйттеләр.

Беҙҙең колхозда Маҡар МТС-ының иптәш Дәүләтов етәкселек иткән трактор бригадаһы эшләй. Был бригада хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә [illegible] нормаларын арттырып үтәй. Ул [illegible] бишкөнлектә 40 гектар ер һөрҙө, [illegible] гектар майҙанда культивация үткәрҙе, 250 гектар ер тырматты, 100 гектар майҙанда иртә культуралар сәсте. Тракторсыларҙан коммунист Ғәлләмов, [illegible]тов, Яҡупов иптәштәр көндәлек нормаларын 120-130 процентҡа еткереп үтәйҙәр. Был бригадаға агитатор итеп Ильин һәм Мифтахов иптәштәр беркетелгән. Улар үҙҙәренә йөкмәтелгән эште намыҫ менән башҡаралар.

С. Маҡарский,
Маҡар районы «Большевик» колхозының партбюро секретары.

Йәштәрҙе политик тәрбиәләү эшенә иғтибарҙы көсәйтәйек!

Большевиктар партияһының резервы һәм боевой ярҙамсыһы булып торған Ленин — Сталин комсомолы йәштәрҙе политик тәрбиәләүгә үҙенең төп иғтибарын йүнәлтә. Комсомол ойошмаларының боевой һәләтлеге уларҙың йәштәр араһында эшләүҙәре, йәштәрҙе политик тәрбиәләүҙәре һәм йоғонто яһай алыуҙары менән үлсәнә.

Йәштәр араһында идеологик тәрбиә эшен йәйелдереү өсөн комсомол ойошмалары, бөтәһенән элек, комсомолецтарҙың һәм союздан тыш йәштәр активының политик уҡыуҙарын юғары кимәлдә, йөкмәткеле итеп алып барыуҙы тәьмин итергә бурыслылар. Комсомолецтарҙың политик белем кимәлдәрен күтәрмәй тороп, йәштәр араһында ниндәй ҙә булһа тейешле тәрбиә эше алып барыу тураһында уйлауы ла мөмкин түгел.

Быны ошо хәлде иҫәпкә алып, ВЛКСМ-дың Саҡмағош райкомы быйыл комсомолецтарҙың политик уҡыуҙарын ойоштороуға айырыуса ҙур иғтибар бүлде.

Комсомол мәғарифе селтәрендә уҡыу йылы ойошҡанлыҡ менән башланды. Комсомолецтарҙың белем кимәлдәренә ҡарап, бөтәһе 74 урында, 1179 комсомолецте һәм союздан тыш йәштәрҙе эсенә алған политик мәктәп һәм түңәрәк ойошторҙоҡ. Шуларҙан 5 урында «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәге, 12 урында политик мәктәп, 30 урында В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең биографияларын өйрәнеү түңәрәге һәм 18 урында политик уҡыу түңәрәге ойошторҙоҡ. Бынан башҡа район буйынса 27 кеше марксизм-ленинизм теорияһын үҙ алдына өйрәнә. Үҙ алдарына өйрәнеүселәргә ярҙам итеү өсөн ВКП(б) райкомы тарафынан консультанттар билдәләнгән.

ВЛКСМ райкомы быйылғы уҡыу йылында пропагандистарҙы һайлап алыуға айырыуса ҙур иғтибар итте. Политик мәктәптәргә һәм түңәрәктәргә етәкселек итеү өсөн 74 кеше билдәләнде. Улар беркетелгән түңәрәктәргә етәкселек итеү менән бергә, үҙҙәренең политик белемдәрен күтәреү өҫтөндә лә эшләйҙәр. 16 пропагандист марксизм-ленинизм теорияһын үҙ алдына өйрәнә, 34 пропагандист юғары уҡыу йорттарында ситтән тороп уҡый, 24 пропагандист партия мәғарифе селтәрендәге политик түңәрәктәргә йөрөй.

Шул уҡ ваҡытта уҡыу йылы башынан бирле пропагандистар менән 26 тапҡыр семинар занятиелары үткәрелде. Семинарҙа пропагандистар алда торған тема буйынса лекция тыңлайҙар. Һөҙөмтәлә политик түңәрәктәрҙең һәм мәктәптәрҙең эше, занятиеларҙың идея кимәле байтаҡ яҡшырҙы.

Миҫал өсөн «Йәштәр» колхозы комсомол ойошмаһы эргәһендәге политик мәктәптәрҙе алырға мөмкин. Бындағы 65 комсомолецтың бөтәһе лә политик мәктәптәргә ылыҡтырылған. Политик мәктәптәргә етәкселек итеү эше пропагандист Садыҡова, [illegible]сип һәм Юнькова иптәштәргә тапшырылған. Улар үҙҙәренә тапшырылған эште намыҫ менән башҡаралар. Һәр занятиене программа буйынса күрһәтелгән китаптар буйынса ғына түгел, шулай уҡ художестволы китаптар, газета материалдары, күргәҙмә материалдар һәм башҡа бик күп сығанаҡтар буйынса ныҡлы әҙерләнеп [illegible]лалар. Шуға күрә лә уларҙың занятиелары йәнле һәм тыңлаусылар өсөн ҡыҙыҡлы була. Тыңлаусылар үтелгән материалдарҙы яҡшы үҙләштереп баралар.

Был колхоздың комсомол ойошмаһы (секретары иптәш Ғәбдрәфиҡов) союздан тыш йәштәр араһында агитацион-массовый эш алып барыуға ла ҙур иғтибар бирә. Шуның өсөн дә колхоздың алдынғы йәштәренән быйыл ғына 20 кеше ВЛКСМ сафына ҡабул ителде.

«Байраҡ» колхозы комсомол ойошмаһы эргәһендәге политик түңәрәктәрҙә лә занятиелар ойошҡанлыҡ менән үтәлә.

Пропагандистарға ярҙамды [illegible] маҡсатында комсомол райкомы ВКП(б) райкомының ярҙамы менән 28 кешенән торған докладсылар группаһы ойошторҙо. Был докладсылар комсомолдың [illegible] ойошмаларына беркетелделәр. Улар комсомолецтар һәм союздан тыш йәштәр араһында политик темаларға докладтар менән сығыш яһайҙар.

Докладсыларҙан Ғ. Ғайсаров, [illegible]манова, З. Гулюмова, Р. Айҙаров иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Иптәш Ғайсаров Үрнәк ауыл Советы эргәһендәге территориаль комсомол ойошмаһында 34 тапҡыр доклад яһаны.

Хәҙер политик мәктәптәр һәм түңәрәктәрҙә үтелгән материалдарҙы [illegible] занятиелары башланды.

ВЛКСМ райкомы комсомол мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын уңышлы тамамлауға үҙенең төп иғтибарын йүнәлтә.

Р. Ма[illegible],
ВЛКСМ-дың Саҡмағош райкомы секретары.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Общественный малсылыҡҡа иғтибар бирмәйҙәр"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 14 апрель номерендә Тәтешле районы Красин исемендәге колхоздың председателе Ғафиуллин һәм малсылыҡ фермаһы мөдире Шәмсетдиновтың общественный малсылыҡты үҫтереүгә яуапһыҙ ҡарауҙары һәм мал аҙығын әрәм-шәрәм итеүгә юл ҡуйыуҙары тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы Тәтешле район Советы исполкомы редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Общественный малсылыҡҡа иғтибар бирмәйҙәр» тигән хәбәр урында тикшерелеп, унда асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм эште яҡшыртыу буйынса практик саралар билдәләнде. Общественный малдарҙың кәмеүенә юл ҡуйғаны өсөн Красин исемендәге колхоздың председателе Ғафиуллин урынынан алынды һәм уға партия линияһы буйынса ҡаты шелтә бирелде. Малсылыҡ фермаһы мөдире Шәмсетдиновты яуапҡа тарттырыу өсөн материал төҙөлөп прокуратура органдарына тапшырылды. Һуңғы көндәрҙә малсылыҡ фермаһы тейешле кадрҙар менән комплектовать ителде. Малдарҙы үҫтереү планын үтәүҙә практик ярҙам күрһәтеү өсөн был колхозға район ауыл хужалығы бүлегенең участка зоотехнигы иптәш Мөхәмәтфәтихов беркетелде.

СССР МИНИСТРҘАР СОВЕТЫНДА

СССР Министрҙар Советы «Бөтә йөрәктән» операһының музыкаһы өсөн композитор Герман Леонтьевич Жуковскийға «Музыка» бү[illegible]е буйынса 1950 йыл өсөн [illegible] Сталин премияһын биреү тураһындағы [illegible] элекке ҡарарҙы юҡҡа сығарыу хаҡында СССР Министрҙар Советы эргәһендәге әҙәбиәт һәм искусство өлкәһендә Сталин премиялары буйынса комитеттың юллауын ҡәнәғәтләндерҙе.

СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШ ЙӨКЛӘМӘЛӘРЕН ҮТӘҮ ӨСӨН КӨРӘШТӘ ХӘЙБУЛЛА, БАЙМАҠ, ӘБЙӘЛИЛ ҺӘМ ЙОМАҒУЖА РАЙОНДАРЫНЫҢ КОЛХОЗСЫЛАРЫ КЕҮЕК ЭШЛӘГЕҘ!

☆ ☆

Коммунистәр еңеүҙе ойоштороусылар

Йомағужа районының игенселәре 1951 ауыл хужалығы йылында бөртөклө һәм техник культураларҙың урожайлылығын арттырыу буйынса күтәренке йөкләмәләр алғайнылар һәм Күгәрсен районы колхозсыларын үҙҙәре менән социалистик ярышҡа саҡырғайнылар. Колхозсылар һәм механизаторҙар МТС һәм колхоз партия ойошмалары етәкселегендә алынған йөкләмәләрҙе үтәүгә ҙур көс һалдылар.

Быйылғы яҙғы сәсеү колхоз ҡоролошонда булып үткән яңы шарттарҙа — вағ колхоздарҙы эре ауыл хужалығы артелдәренә әйләндереү шарттарында үткәрелеүен иҫкә алып, партияның район комитеты үҙенең практик эшмәкәрлеген ошо яңы шарттарға йүнәлтеп ҡорҙо. Райондағы 23 эреләтелгән колхоздың яҙғы сәсеү майҙаны, 1950 йыл менән сағыштырғанда, 8 процентҡа артып, 26 мең гектар тәшкил итте. Шул иҫәптән, бары тик бойҙай культураһы ғына 13 мең гектар сәселергә тейешле ине.

Райондың колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүгә әҙерләнеү һәм уны үткәреү тураһындағы мәсьәләләр колхоз һәм МТС коммунистәренең асыҡ йыйылыштарында тикшерелде. Билдәләнгән бурыстарҙы үтәү йөҙөнән колхоз производствоһының иң яуаплы участкаларына 220-нән артыҡ коммунист һәм практик эштә үҙҙәрен булдыҡлы итеп танытҡусы йөҙҙәрләгән партияһыҙ большевиктәр беркетелде. Колхоз правлениеларе менән берлектә яҙғы сәсеү осоронда эш пландары төҙөлдө, ауыл хужалығы артелдәре члендәренең дөйөм йыйылыштарында эске тәртип раҫланды.

ВКП(б) райкомы тарафынан ҡуйылған талаптарҙан сығып партияның колхоз һәм МТС тәүге ойошмаларында яҙғы сәсеү осороң политик-массовый эш пландары төҙөлдө. Уларҙа билдәләнгән сараларҙы үтәүгә 300-ҙән артығыраҡ агитатор йәлеп ителде. Партияның район комитеты агитацион-массовый эште механизаторҙар араһында ойоштороуға айырыуса ҙур иғтибар бирҙе һәм партияның бөтә колхоз һәм МТС тәүге ойошмаларының секретарҙәре был почетлы бурысты намыҫ менән үтәнеләр. «Урал», М. Горький, Хоҙайбирҙин исемендәге һәм башҡа колхоздар эргәһендәге партия ойошмаларының был өлкәләге тәжрибәһе иғтибарға лайыҡлы. Уларҙың бөтә эше алдан уйлап төҙөлгән план буйынса алып барылды. Партияның Хоҙайбирҙин исемендәге колхоз тәүге ойошмаһындағы (секретаре иптәш З. Яппаров) бөтә коммунистәр ҙә баҫыуҙа агитатор булып эшләнеләр. Агитатор иптәш Ғөбәйдуллин, башҡа коммунистәр кеүек үк, үҙенә йөкмәтелгән поручениене айырыуса яратып башҡарҙы. Уны һәр көн баҫыу стандарында осратырға мөмкин ине. Ул боевой листоктар сығарыу, политик йәки хужалыҡ темаларға беседалар уҙғарыу, тракторисҭарҙың культура вагондарын йыһазландырыу менән шөғөлләнде. Был колхоз агитаторҙарынан Яппаров, Шахмаев һәм башҡа иптәштәр ҙә партия ойошмаһының ышанысын тулыһынса аҡланылар. Колхоз партия ойошмаларының иғтибары игенселәрҙе юғары урожай үстереүҙе тәьмин итеүгә тупланды. Иртә культуралар сәсеү осоронда ауыл эшсәндәренең йәшелә, ҡарты ла арыу-талыу белмәйенсә баҫыуҙа эшләнеләр.

Баҫыуҙарҙа киң ҡолас алған бөтә халыҡ социалистик ярыш тулҡынының башында коммунистәр һәм комсомолецтәр булдылар. Шахмаев, Исмәғилов, Леонтьев һәм улар кеүек тиҫтәләгән башҡа коммунистәр үҙҙәре фиҙакәр эшләү менән генә сикләнмәйенсә, бөтә игенселәрҙе ныҡышмалы хеҙмәткә рухландырҙылар.

Иртә культуралар сәсеүҙе яҡшы сифатлы итеп ҡыҫҡа сроктарҙа тамамлауҙа машина-трактор станциялары коллективтәре хәл иткес роль уйнанылар. Етешһеҙлектәр һәм ҡыйынлыҡтар байтаҡ булыуға ҡарамаҫтан, райондың ике МТС-ы ла үткән йылдарға ҡарағанда быйыл ойошҡаныраҡ эшләне. Эске резервтарҙы файҙаланыуға өлгәшкән Подгорный МТС-ы механизаторҙарының хеҙмәтен айырыуса билдәләп үтке килә. Был МТС-тың тракторҙар һәм тағылма ҡоралдар паркы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк тип әйтерлек юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге менән эшләне. Иптәш Әмиров бригадаһы «Ағиҙел» колхозында иртә культуралар сәсеүҙе (бөтәһе 1145 гектар) ун эш көнөндә тамамланы. Социалистик ярыш йомғаҡтары буйынса еңеүсе тип табылған был бригада МТС дирекцияһының һәм партия ойошмаһының күсмә Ҡыҙыл Байрағын алды. Ошо уҡ МТС тарафынан хеҙмәтләндерелә торған Хоҙайбирҙин исемендәге ауыл хужалығы артеле иртә культуралар сәсеүҙе районда беренсе булып тамамланы. Был бригадаларҙың айырым тракторисҭәре тракторҙар эшенең йыллыҡ планын 40 процентҡа үтәнеләр. Хоҙайбирҙин МТС-ында ла күп кенә трактор бригадалары юғары күрһәткестәргә өлгәштеләр.

Райондың МТС-тарында быйыл сәғәт графигы буйынса эшләүсе трактор бригадаларының һаны байтаҡҡа артты. Бары тик Подгорный МТС-ында ғына был яңы методты биш бригада үҙләштерҙе. Хеҙмәт етештереүсәнлеген үҫтереүгә алып барыусы ошо прогрессив методты ҡулланыуҙа колхоздарҙа механизаторҙарға ҙур ярҙам күрһәтелде.

Район колхозсыларының һәм механизаторҙарының ныҡышмалы хеҙмәте ҙур еңеү килтерҙе. Иртә культуралар сәсеүҙе беҙ республикала беренсе булып тамамланыҡ. Государство планы 101 процентҡа үтәлде. Хәҙерге ваҡытта райондың байтаҡ колхоздарында пландан тыш иртә культуралар сәсеү дауам иттерелә. Шуның менән бер рәттән һуңғы культуралар сәсеү, пар һөрөү эштәре алып барыла.

Большевиктәр партияһының һәм Совет хөкүмәтенең көндәлек ҙур ярҙамы менән рухланған Йомағужа районы игенселәре сталинса урожай үҫтереү өсөн республика баҫыуҙарында киң йәйелдерелгән социалистик ярыштың алдынғы сафында баралар. Атайҙарса хәстәрлеккә беҙ юғары урожай үҫтереү менән яуап бирербеҙ. Колхоз баҫыуҙарында берҙәм, тигеҙ булып үҫеп ултырған йәшел ашлыҡтар беҙҙең теләгебеҙгә ирешеүебеҙҙе вәғәҙә итә.

Х. Әхмәтов,

ВКП(б)-ның Йомағужа район комитеты секретаре.

☆ ☆ ☆

ЮҒАРЫ УРОЖАЙ ӨСӨН КӨРӘШТӘ

Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә беҙ ныҡлы тыныслыҡ өсөн көрәшәбеҙ, коммунизм төҙәйбеҙ. Бөтә совет халҡы менән берлектә, беҙҙең Әбйәлил районы хеҙмәтсәндәре лә ошо маҡсатта ижади хеҙмәт итә, һәр бер участкала арыу-талыуҙы белмәй эшләй.

Беҙҙең райондың колхозсылары, МТС һәм совхоз эшсәләре быйыл яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәреүҙәре менән илебеҙҙә коммунизм төҙәүгә һәм бөтә донъяла тыныслыҡ фронтын ныҡытыуға вклад индерҙеләр.

Райондың партия һәм совет ойошмалары, ауыл эшсәндәренең патриотик хеҙмәт күтәрелешенә етәкселек итеп, яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү өсөн бөтә сараларҙы күрҙеләр. Коммунистәр һәм комсомолецтәр яуаплы участкаларҙа эшләнеләр һәм массаларҙы үҙ өлгөләре менән рухландырҙылар. Һәр бер колхозсы, механизатор һәм совхоз эшсеһе, шулай уҡ бөтә коллектив социалистик ярышта алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәнеләр. Был баҫыу эштәрендә көндәлек һәм смена нормаларының массовый арттырылып үтәлеүенә килтерҙе. Шуныңлыҡтан колхоздар һәм совхоздар һөрөүҙә һәм сәсеүҙә графикте үтәп һәм арттырып үтәй барҙылар.

Һеҙәмтәлә Әбйәлил районы колхоздары һәм совхоздары яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа сроктарҙа һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүҙе тәьмин иттеләр. Райондағы «Красная Башкирия» һәм Йәнгел бөртөклө ашлыҡ совхоздары яҙғы сәсеүҙе беренсе майға уҡ тамамланылар. Ә районың колхоздарында был эш 13 майға тамамланды. Колхоздарҙа бөтәһе 22 мең 220 гектар ашлыҡ сәселде. Ә ҡиммәтле аҙыҡ культураһы булған бойҙай 13179 гектар, шул иҫәптән, 679 гектар пландан тыш сәселде. Мал аҙығы культураларынан тамыр аҙыҡтар сәсеү планы ла арттырып үтәлде. Колхоздар баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын ултыртыуҙы яҡшы ойошторҙолар. Шайморатов исемендәге колхоз (председателе иптәш Хөснөтдинов, партия ойошмаһы секретаре иптәш Сөләймәнов) 12 гектар майҙанда ағас ултыртып, йыллыҡ планды үтәп сыҡты.

Был колхозда һуғарыу ҡоролмаһы бар. Бында яҙғы осорҙа 800 гектар болонлоҡ һуғарылды. Хәҙер колхоз баҫыуҙарҙы һуғарыуға әҙерләнә. Быйыл бөтәһе 1200 гектар сәсеүлек һуғарыласаҡ. Молотов исемендәге колхозда ла һуғарыу эше ҡулайлаштырылған. Бында 1000 гектар болонлоҡ һуғарылды.

Яҙғы баҫыу эштәре осоронда Әбйәлил МТС-ы (директоры иптәш Тихонин) эште айырыуса яҡшы ойошторҙо. Бында колхоздар менән төҙөлгән договорҙа күрһәтелгәнсә, яҙғы осор планы бөтә төр эштәр буйынса тулыһынса үтәлде. Тракторисҭарҙан Попков, Короткин һәм Прокофьев иптәштәр яҙғы баҫыу эштәрен өлгөлө башҡарҙылар.

Әлмөхәмәт МТС-ы тракторисҭәре Азанов һәм Сайтин иптәштәр ҙә юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге менән эшләнеләр. Ләкин, дөйөм алғанда, Әлмөхәмәт МТС-ы быйыл насар эшләй. Ул колхоздар менән төҙәшкән договор йөкләмәләренең ваҡытында үтәлеүен тәьмин итмәй. «Һаҡмар» колхозын хеҙмәтләндергән Тихонов һәм Зөлҡәрнәев, «Үрнәк» колхозын хеҙмәтләндергән Ҡунаҡкилдин иптәштәр етәкселек иткән бригадалар тракторҙарҙы насар файҙаланалар. Шул арҡала был колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәре оҙаҡҡа һуҙылды. Иптәш Зөлҡәрнәев бригадаһы тракторисҭәре «Һаҡмар» колхозында 9 гектар ерҙе предплужникһеҙ һабан менән һөрҙөләр. Был майҙан ҡабаттан эшкәртелде.

Яҙғы баҫыу эштәрендә колхоздарҙың йәнле тартыу көстәре тейешенсә файҙаланылманы. Колхоз етәкселәре был эшкә ныҡлы иғтибар бирмәнеләр. Молотов һәм Калинин исемендәге колхоздарҙа аттар менән бер гектар ҙа ер һөрөлмәне. Бөтә был етешһеҙлектәргә юл ҡуйылмаһа, районыбыҙ яҙғы сәсеүҙе тағы ла иртәрәк срокта тамамлай алыр ине.

Хәҙер беҙҙең колхоздарҙа һәм совхоздарҙа пар һөрөлә, тары, киндер сәселә, картоф ултыртыла. Колхоздарҙа 1000 гектар майҙанда иртә таҙа пар һөрөлдө инде. Был эштә лә Әбйәлил МТС-ы механизаторҙары яҡшы эшләйҙәр. «Красная Башкирия» совхозында ла пар һөрөү уңышлы бара. Йәнгел совхозында 2000 гектар пар һөрөлөп, план 60 процентҡа үтәлде. Райондың колхоздары пар һөрөүҙе тиҙ көндәрҙә тамамлаясаҡтар.

Ф. Кирханов,

ВКП(б)-ның Әбйәлил райкомы секретаре.

Баймаҡ районы игенселәренең ҙур еңеүе

Баймаҡ районы игенселәре 10 майға яҙғы культуралар сәсеүҙе тамамлап, планды 101 процентҡа үтәнеләр.

Билдәле, еңеү үҙенән-үҙе килмәне. Ул колхозсыларҙың, механизаторҙарҙың тырышлыҡтары, ҙур хеҙмәттәре менән яулап алынды.

Яҙғы баҫыу эштәре — айырыуса яуаплы һәм мөһим хужалыҡ-политик кампания ул. Уны уңышлы үткәреү сталинса юғары урожайға ныҡлы нигеҙ һалыу, социалистик ауыл хужалығын артабан күтәреү тигән һүҙ. Район партия ойошмаһы ошо мөһим бурысты үтәү өсөн, үҙенен бөтә көсөн, бөтә һәләтлелеген һалды. Киң колхозсылар араһында массовый-политик эште көсәйтеүгә ныҡ иғтибар бирелде.

Ошо нигеҙҙә яҙғы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк коммунистәр хәл иткес участкаларға беркетелделәр. Районда 541 коммунист һәм 317 комсомолец турапан-тура баҫыу эшендә эшләнеләр. Шулай уҡ 348 агитатор баҫыуҙа эшләүсе колхозсылар араһында массовый-политик эш алып барҙы. Улар ауыл эшсәндәренә партия һәм хөкүмәттең ҡарарҙарын аңлатыуҙа, уларҙы патриотик хеҙмәткә рухландырыуҙа хәл иткес роль уйнанылар.

Беҙ урындарҙа агитаторҙарҙы һайлап алыу, уларҙы урынлаштырыу менән генә сикләнеп ҡалманыҡ, ә көндәлек етәкселекте тәьмин иттек. ВКП(б) райкомы тарафынан кустовой кәңәшмәләр үткәрелде. Ә партия ойошмалары һәр аҙна һайын инструктаж алып торҙолар. Массовый-политик эште юғары кимәлгә күтәреү өсөн партияның тәүге ойошмаларына ярҙамға райондың яуаплы работниктәре ебәрелде. Был саралар күп кенә ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе.

Бөтә баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларында беседалар, ҡысҡырып газеталар уҡыу систематик ойошторолдо. Стена газеталары, боевой листоктар сығарылды. Көндәлек эш йомғаҡтары, алдынғыларҙың эш тәжрибәләре күрһәткес һәм почет таҡталарына яҙылып барылды. Фрунзе, Карл Маркс исемендәге, «Ҡыҙыл Байраҡ», «Яңы тормош» колхоздарындағы партия ойошмалары массовый-политик эште айырыуса яҡшы итеп ойошторҙолар. Партия ойошмаһы секретарҙәре Ғәҙелшин, Хлестов, Ғүмәров, Рәхимов иптәштәр агитаторҙарға көндәлек, практик ярҙам күрһәттеләр. «Ҡыҙыл маяҡ», «Ирәндек», Калинин исемендәге колхоздарҙа ла массовый-политик эш уңышлы алып барыла. Бына шуның өсөн лә Фрунзе, Карл Маркс исемендәге, «Ирәндек» колхоздары яҙғы баҫыу эштәрен 10 эш көнөндә юғары агротехник кимәлдә тамамланылар.

Район иртә культуралар сәсеүҙе 5 майға, ә бөтә яровой культуралар сәсеүҙе 10 майға 101 процентҡа үтәне. Карл Маркс исемендәге колхоздың беренсе баҫыусылыҡ бригадаһының бригадиры коммунист Үҙәнбаев, «Ҡыҙыл Байраҡ» колхозының 2-се номерлы баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры Хәлилов һәм башҡа иптәштәр стахановсы эш өлгөләре күрһәттеләр. Һөрөүҙә, тырматыуҙа, сәсеүҙә эшләүсе коммунист Уйылданов Исмәғил, Үҙәнбаева Нурия, Турсонбаев, Ҡадиров һәм башҡалар көндәлек заданиене 180—210 процентҡа үтәп барҙылар.

Хәҙер райондың колхозсылары, партия һәм совет ойошмалары алдында иртә пар һөрөү планын үтәү, бөтә сәсеүлектәрҙе яҡшы итеп тәрбиәләү, һәм урожай йыйыуға өлгөлө әҙерләнеү бурысы тора. Һис шикһеҙ, беҙ был бурысты ла намыҫ менән үтәп сығасаҡбыҙ.

С. Ғәбитов,

ВКП(б)-ның Баймаҡ район комитеты секретаре.

СӘСЕҮ ЮҒАРЫ ОЙОШҠАНЛЫҠ МЕНӘН ҮТКӘРЕЛДЕ

Аҡъяр. (Телеграф аша). Хәйбулла районы колхозсылары һәм механизаторҙары, юғары урожай өсөн көрәште киң йәйелдереп, быйыл яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәрҙеләр. «Красная звезда», «Красное знамя», «Таналыҡ», Калинин исемендәге һәм башҡа колхоздар яҙғы сәсеүҙе айырыуса яҡшы башҡарҙылар. Был колхоздар байтаҡ майҙанда бөртөклө культураларҙы пландан тыш та сәстеләр.

Яҙғы баҫыу эштәрендә колхозсылар һәм механизаторҙар араһында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, агитацион-массовый эштәрҙе киң йәйелдереү һөҙөмтәһендә райондың колхоздары яҙғы культуралар сәсеүҙең государство планын 10 майға 104 процентҡа үтәнеләр. Төп аҙыҡ культураһы булған бойҙай 22 мең 100 гектар итеп сәселде.

Хәйбулла районының механизаторҙары һәм колхозсылары, баҫыу эштәренең темпын төшөрмәҫтән, пар һөрөү эшенә башланылар. «Красная звезда», «Красное знамя», «Берлек», Калинин исемендәге колхоздар пар һөрөү планын 28—37 процентҡа үтәнеләр.

Р. Шәфиҡова.

ХЕҘМӘТ ЕТЕШТЕРЕҮСӘНЛЕГЕ КҮТӘРЕЛӘ

Черниковск. 9-сы номерлы төҙөлөш контораһы коллективы станоктарҙы һәм оборудованиеларҙы рациональ файҙаланыу өсөн көрәшкә ҡушылды. Производствоның алдынғы кешеләре хеҙмәт процестарын яҡшыртыу өсөн даими хәстәрлек күрәләр.

Ремонт-техник мастерскойы начальнигы иптәш Зайцев фрезер станоктарына ҡулайлаштырыу эшләргә тәҡдим индерҙе. Ошо ҡиммәтле тәҡдимде үҙләштереү һөҙөмтәһендә хеҙмәт етештереүсәнлеге 70 процентҡа күтәрелде.

Контораның слесаре иптәш Орлов үҙ эшендә ҙур ижади инициатива күрһәтә. Элек төҙөлөш тресының кирбес заводы өсөн шапилькалар һәм скобалар ҡул көсө менән эшләнде, быңың өсөн бик күп ваҡыт талап ителә ине. Слесарь Орлов был детальдарҙы преста эшләргә тәҡдим индерҙе. Шулай итеп, күп көс талап итә торған операция механизация көсө менән эшләнә башланы. Был хәл продукцияның сифатын яҡшыртыуға ҙур мөмкинлек тыуҙырҙы.

В. Памирский.

АГИТКОЛЛЕКТИВ БАҪЫУҘА

Ғафури районының «Йондоҙ» колхозы партия ойошмаһы агитколлективҡа етәкселек итеү эшен үҙенең иғтибар үҙәгендә тота. Был агитколлективта барлығы 42 агитатор иҫәпләнә. Уларҙың күпселеге политик яҡтан әҙерлекле, практик эштә тәжрибәле коммунистәрҙән, уҡытыусылар һәм комсомолецтәрҙән тора.

Агитаторҙар менән апрель айында 4 тапҡыр семинар уҙғарылды. Семинарҙа «Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре», «Колхоз производствоһында агитаторҙарҙың бурыстары» тигән һәм башҡа темаларға докладтар, лекциялар уҡылды һәм агитаторҙар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Баҫыуҙа эш башланыу менән агитацион-массовый эш тә баҫыуға күсерелде. Агитаторҙар төшкө аш ваҡытында колхозсылар менән беседалар үткәрәләр, уларға ҡысҡырып газеталар уҡыйҙар, боевой листоктар сығаралар, эштәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ярҙам итәләр. Агитаторҙарҙан И. Үтәгәнов, М. Шәйәхмәтов, А. Сәйфуллина, З. Абдгужин, Р. Салауатова, Н. Нәфиҡова, В. Хисамов иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр.

И. Мәүлетҡолов.

Малсылыҡ работниктәренең яңы уңыштары

Бүздәк бөртөклө ашлыҡ совхозының малсылыҡ работниктәре социалистик ярышта малдарҙың продукт биреүсәнлеген күтәрергә йөкләмә алғайнылар. Быңың өсөн улар иң элек һыйырҙарҙы группаларға бүлделәр. Һыйырҙарҙы көнгә 5-6 тапҡыр һауа башланылар. Был бик яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе.

Мәҫәлән, иптәш Макеева етәкселек иткән 2-се номерлы бригаданың һыйыр һауыусыһы иптәш Хәмитова элек 13 литр һөт биргән «Гитара» ҡушаматлы һыйырҙан, яҡшы тәрбиәләү һөҙөмтәһендә, 20,5 литр һөт һауып алды. Ә һыйырҙарҙы күп тапҡыр һауа башлағас, ул был һыйырҙан 30,5 литр һөт һауып алыуға өлгәште.

Иптәш Хәмитова менән ярышыусы иптәш Шәйәхмәтова ла шулай уҡ яҡшы күрһәткестәргә өлгәште. Ул үҙенә беркетелгән һыйырҙарҙан көнөнә 24-әр литр һөт һауып ала башланы.

Х. Саттаров.

Коммунизм төҙөлештәрендә

2. Баҫҡыслы һыу юлы

Поезд көньяҡҡа ашҡына. Сталинградтан сығып киткәс тә юл Волга буйынан бара. Уң яҡта бер-бер артлы тауҙар теҙелгән. Улар оҙон теҙмә булып һуҙылғандар. Көмлө ялангас тауҙар. Бөйөк көрәштәрҙең был шаһиттәрен бик күптәр хәтерләйҙәр.

Красноармеец районын уҙғас та был бөйөк тауҙар теҙмәһе, ҡапыл ғына боролоша йәһән, Волганан алыҫлаша, күҙ алдында киң тигеҙлек асыла. Бына ошо урында мәшһүр Волга—Дон каналы башлана. Сарепт затоны эргәһендәге беренсе шлюзда уҡ һыу ун метрға күтәрелергә тейеш. Унан инде тигеҙ ерҙә ҡаҙылған канал һуҙыла. Каналдың байтаҡ участкалары әҙер тиерлек. Ләкин эш күп. Бер-бер артлы теҙелгән экскаваторҙар, ҡаты ерҙе ... үҙе бушатҡыс автомашиналарға тейәйҙәр, ер өйөмдәрен бульдозерҙар тигеҙләй. Скреперҙар, ер тырнап, каналдың төбөн тәрәнәйтәләр.

Асфальт юл каналдан алыҫлашмай. Күҙ алдына төҙөлөштөң яңынан-яңы картиналары килә. Оҙаҡламай икенсе шлюз, унан өсөнсөһө, дүртенсеһе... Был бөйөк һыу юлы, ике йылға араһының иң ҡалҡыу урынына барып еткәнсе, туғыҙ бөйөк баҫҡыс яһап, Волга кимәленә ҡарағанда 88 метрға күтәрелергә тейеш. Бынан һуң баҫҡыстар түбән төшәсәк. Тик улары күп түгел. Бөтәһе дүртәү генә. 13-сө шлюзҙы үткәс тә, 44 метрға түбәнәйеү менән канал тып Донға килеп ҡушыла.

Шлюзҙар Волга—Дон каналының иң ҙур һәм ... ҡоролмалары. Эш күләме ... күп ... уҙҙарға тура килә. Шлюздарҙа эш бөтөнләй көндә торҙоса: беренсеһендә ҙур котлован ҡаҙылһа, икенсеһендә арматура ҡуйыла йәки бетон һалына. Волга яғындағы тәүге шлюз өсөн янырак ҡына ер һуырғыс снаряд менән котлован ҡаҙып бөтөлгән булһа, Дон яғындағы 13-сө номерлы шлюз инде төҙөлөп бөтөп килә тиерлек. Ул башҡаларына ҡарағанда һыу менән элегерәк тултырылырға тейеш.

Әйе, был шлюз хәҙер күҙгә күренеп үҫә. Тик көрәштең ҡыйын саҡтары ла булды. Гигант ҡоролманың баш инженеры Мөхәммәт Дивеев тәүге көндәр ауырлығын яҡшы хәтерләй. Уға был шлюзда беренсе көрәк балсыҡтан башлап тиерлек ҡатнашырға тура килде.

Дон казактары йәшәгән кескәй генә хутор ине был урында.

— Бына ошонда, — тинеләр уға, — головной шлюз, ҡеүәтле насос станцияһы, Карповка һыу яткылығы, плотина төҙөргә, бер нисә километр канал ҡаҙырға кәрәк булыр.

— Эш аҙҙан түгел икән, — тине Дивеев.

Уға эш ысынлап та бик ауыр тойолдо. Ул быға тиклем дә, Ленинградта институт тамамлаған көндән алып, Өфө пристандарына реконструкция яһау, Кама һыу юлын, Ленинград порттарын ныҡытыу кеүек күп кенә эштәрҙә етәкселек иткән булһа ла, бындай ҙур күләмле эште күрмәгәйне әле. Берсә ғәжәпләнде, берсә ҡыуанды ул. Коммунизм гигантын төҙөүҙә ҡатнашыу шатландырҙы уны.

Тик был ҡоролмалар ғына түгел ине. Бик күп ярҙамсы предприятиелар, таҙаҡландырылған посёлкалар төҙөргә кәрәк буласағы тураһында һөйләнеләр уға.

1948 йылда төҙөлөшкә эшселәр, специалистәр килә башланы. Өҙлөкһөҙ техника, механизмдар, төҙөлөш материалдары ағылды. Өйҙәр яңы ғына төҙөлә башлағайны. Кешеләр һалҡын палатаға индеәр. Геодезистка Ида Силенко, комсомолец Семён Брушпин кеүек бик күптәр бында техникум тамамлағас та килделәр. Ләкин уларҙы асыҡ яланда йәшәү ҡурҡытманы. Йәш геотехник Римма Сергеева ла тәү килеүсе кеше. Ул лабораторияла бик ентекләп грунттың үҙлектәрен тикшерҙе. Кескәй генә яңылышыуҙың ҙур зыян яһаясағын ысын күңел менән аңлай ине ул.

Бик күп төрлө специалистәр кәрәк ине бында. Һөнәрҙәр бөтәһе лә өйрәнделәр. Улар үҙләштермәгән бер генә эш тә булманы. Шуға күрә лә эш гөрләне, бер ыңғайҙан киң фронт менән башҡарылды. Яңы техника, иҫ киткес ҙур механизмдар эш урынында монтажланып эшләтелделәр.

...Шлюз өсөн бер кварталдың майҙаны ҙурлығында котлован ҡаҙыла башлағайны. Ул көндән-көн тәрәнәйтелде. Экскаваторҙар ҙа, скреперҙар ҙа тәүлек әйләнәһенә эшләнеләр. Ерҙе йомшартыу механизмдәре, бульдозерҙар һәм ер ташыусы автомашиналарҙың гөрләүе бер генә минутҡа ла туҡтаманы.

Ләкин төҙөүселәр юлында ҙур ҡаршылыҡтар булғыланы.

Биш метр тәрәнлеккә еткәс тә улар тәүге ҡаршылыҡҡа осранылар: грунт һыуы һарығып сыға башланы. Бөтөнләй көтмәгәндә, уйламаған урындан ғына килеп сыҡты ла, ул тиҙ арала бөтә төҙөлөш майҙанын һыу аҫтында ҡалдырҙы. Экскаваторҙарҙың сүместәренә һыуланған балсыҡ йәбешеп яфаланы, агрегаттарҙы туҡтатып таҙартыу кәрәк була ине.

Ер аҫты һыуы менән көрәшеү өсөн йәш специалист Евгений Фролов етәкселек иткән команда сыҡты, ҡеүәтле насос урынлаштырылды. Тик котлованды ҡоротоп бөтөү мөмкин түгел ине. Төҙөүселәр тәрәнерәк төшкән һайын һыу күберәк килә торҙо. Сәнки бында Карповка йылғаһы яҡын. Ул ҙур йоғонто яһаны. Шуға күрә лә ҡеүәтлерәк установкалар, артезиан насостары ҡуйып, һыуҙы килеп етмәҫ элек, юлында уҡ тота башланылар. Билдәле, һыу еңелде. Шулай метр артынан метрҙарҙы яулап, тәрәнлеккә юл һалдылар. Ләкин ҡаршылыҡ һәр ваҡыт була. Ҡапыл ҡаты һыуыҡтар башланды. Туңған ерҙе экскаватор сүмесе лә, бульдозерҙарҙың быҫаҡтары ла кимерә алманы. Бында ла кешеләр еңделәр, машиналарға ярҙамға подрывниктәр килде.

Һәм котлован ҡаҙылып бөттө. Дүртәр ҡатлы йорттарҙы һыйҙырырлыҡ тәрәнлектән кешеләр юғары ҡарап үҙ эштәре менән һоҡландылар.

Шул көнлә үк арматура ҡоролмаларын ҡуйыу эше башланды. Алдан уҡ бөтә кәрәкле әҙерлек алып барылғайны. Арматураны яр башында ферма итеп әҙерләгәндәр. Улар портал крандары ярҙамында кәрәкле урынға бирелә. Бетон да ҡоролма янына ғына төҙөлгән автомат заводта әҙерләнә. Шлюз нигеҙенә арматура һалынып бөткәс тә уға киң фронт менән бетон ташый башланылар. Үҙе бушатҡыс машиналар бер-бер артлы завод аҫтына килеп торҙолар, тейәлгән бетонды насос станцияһына ташынылар. Ҡеүәтле насос әҙер бетонды кәрәкле урынға бирә торҙо. Насос поршененең торбаға бәреле туҡылдауы бер генә минутҡа ла тынманы. Бадьяларға һалынып килтерелгәне түбәнге портал крандары менән бирелде.

Бетон массаһы шлюзға бик күп кәрәк ине. Шуға күрә был эш буран аҫтында ла, сатлама һыуыҡтарҙа ла туҡтаманы. Ауыр булды. Ләкин кешеләр түҙҙеләр, бөтә ауырлыҡты еңеп, шлюз нигеҙен үҫтерҙеләр. Үҙҙәре лә үҫтеләр. Бетон һалыуҙа десятник Евдокия Колесникова айырыуса ҙур оҫталыҡ күрһәтте.

— Бетон эшендә художник кеүек булырға кәрәк, — ти ул. — Яҡшы картина үҙенең төҫөн үҙгәртмәй, буяуы уңмай. Беҙҙең эш тә шулай булырға тейеш.

Иптәш Колесникова бөтә бригадаһын шулай эшләргә өйрәткән. Бетонщиктәр һалынған иҙелмәнең һәр йыйырсығын, һырын ҡарап эш итәләр. Әйтерһең художник полотноға һалған буяуын күҙәтә.

Шлюздең төбө бетонланып бөтөү төҙөүселәр өсөн ҙур байрам кеүек булды. Һәр кем уға ныҡ һәм ышаныслы итеп баҫты.

— Был мәңгелек нигеҙ булып ҡаласаҡ, — тине баш инженер Мөхәммәт Дивеев.

— Беҙ төҙөгән нигеҙ, Мөхәмәт Шәрипович, — тип ҡеүәтләнеләр уның һүҙен.

Хәҙер шлюздең түбәнге башы тамам әҙер. Унда пароход үтә торған ҡапҡа өсөн дә, һыу ағыҙыу галлереялары өсөн дә урын яһалып бөткән. Бетон ҡыҙыу темп менән үрге баштағы ҡапҡа өсөн урын яһауға бирелә. Стена арматуралары ҡуйылып бөткән опалубка яһалған урындарына бетон ҡоялар...

Шлюз оҙаҡламай әҙер буласаҡ. Яр башында төҙөлгән ҡеүәтле насос уға ялтыран торған Дон һыуын тултырыр. Шлюздең өҫкө яғында, унан ун метр бейегерәк итеп һыу яткылығы төҙөлә. Уның бер яҡ домбаһына таш йәйелгән, икенсе яғында пароходтарға туҡтап тороу өсөн эстакада эшләйҙәр. Стәрлетамаҡ ҡалаһынан барған дизель-сүкештәр бында көп-тәп һыбай ҡаға. Бындағы эш тә шлюздан һуңламаҫ.

Һәр шлюз шулай күҙгә күренеп үҫә. Бөтә ауырлыҡ, тәбиғәттең яман ҡылыҡтары коммунизм төҙөүселәренең батырлығына түҙә алмайынса кирегә сигенә.

Өсөнсө номерлы шлюздең котлованы эсендә сыулар ғәзәте менән бер ваҡыт ҡом массаһы ишелә башлағайны. Ҡот осорорлоҡ ҡурҡыныс хәл ул. Аҙ-маҙ ғына түгел, бер юлы йөҙ мең кубометр ҡом. Бынан шлюзде ҡотҡарыу өсөн төҙөүселәр коллективынан быға тиклем күрелмәгән егетлек, ҙур батырлыҡ талап ителә ине. Һәм бөтә коллектив күрһәтте уны.

Шлюздең төбөнә шпалдарҙы өҫәр ҡатлап йәйеп, был һуҡмаҡтарҙан атлаусы экскаваторҙарҙы ебәрҙеләр. Меңләгән бот ауырлыҡтағы был ауыр машиналар шлюздәр өҫтөнән барғанда, ҡараптар һымаҡ шыйыҡ батҡаҡ эсенән йөҙөп, ишелеп төшкән ҡомдарҙы бушаттылар. Шлюз емерелеүҙән һаҡланып ҡалынды.

Ә икенсе номерлы шлюзға яҙғы һыуҙар һөжүм итте. Ташҡын шәп булды. Һыуҙар эргәләге йылға ярына һыйыша алмайынса шлюзға йырып төштөләр. Ундағы арматура ҡоролмалары, һыу аҫтында ҡалып, оҙаҡ ваҡытҡа эш туҡталасаҡ, бөтә нәмә емереләсәк ине. Тик төҙөүселәр бирешмәнеләр. Прораб комсомолец Юрий Остапченко етәкселегендә улар ике тәүлек буйы ҡоторған стихия менән көрәштеләр. Бер генә минутҡа ла ҡитеүсе булманы унан.

Бындай ауырлыҡтар хәҙер көндәр үткән һайын артта ҡала. Шлюздәр ҡәҙгә табан берәм-берәм сафҡа баҫырҙар, яҙға тиклем һыу менән тулып бөтөрҙәр. Быға тиклем ... башҡа нәмәһе булмаған сүлдәрҙә ... һыу ... ҡалаһе яҙа ... теплоходтары шлюздәр баҫҡысынан күтәрелеп әле, канал үҙәнендә, әле һыу яткылығында йөҙөрҙәр.

Был баҫҡыслы һыу юлын Петр 1 заманында төҙөлгән канал менән дә, унан һуң бик күптәр йөрөткән хыял менән ... тиңлаштерерлек түгел.

Волга-Дон каналы — ул бөйөк төҙөлөш, ул яҡты коммунизм юлы.

Ғ. Ибраһимов.

Махсус хәбәрсебеҙ.

Дон төҙөлөш районы.

13 майҙа Өфө ҡалаһының «Динамо» стадионында Урал зонаһы буйынса РСФСР беренселеге өсөн футбол ярышы булды. Матчта Өфөнөң «Спартак» һәм Черниковск ҡалаһы командалары ҡатнаштылар.

Уйын 2 : 1 иҫәбе менән «Спартак» командаһы файҙаһына тамамланды.

Һүрәттә: Черниковск ҡалаһы командаһының капитаны Б. Глухов (һулда) «Спартак» командаһы капитаны Ю. Ивановты (уңда) еңеү менән тәбрик итә. Уртала судья А. Честов.

И. Гершов тексы, А. Червинский фотоһы.

Ауыл хужалығы өсөн етәксе кадрҙар

Стәрлетамаҡ колхоз кадрҙары әҙерләү мәктәбе 1948 йылдан бирле эшләй. Был ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уны 70 кеше тамамлап сыҡты. Шуларҙан 38 кеше эреләтелгән колхоздарға етәкселек итә, 16 кеше агроном булып, ә бүтәндәре район ауыл хужалығы бүлектәрендә етәксе эштәрҙә эшләйҙәр.

Стәрлетамаҡ колхоз мәктәбе күп райондар менән йәнле бәйләнеш тота. Быйыл яҙғы сәсеү осоронда мәктәптең курсанттары Ауырғазы, Стәрлебаш һәм Стәрлетамаҡ райондары колхоздарына ҙур ярҙам күрһәттеләр.

Хәҙер мәктәптә 2-се курста 109 һәм 1-се курста 134 кеше уҡый. Курсанттар өсөн бөтә уҡыу шарттары тыуҙырылған. Мәктәптә уҡытыусылар кадры ла етерлек. 20 уҡытыусының 14-е юғары белемле.

Л. Исламов.

Һәр бер умартанан 60 килограмм бал алыу өсөн

Яңауыл районы Крупская исемендәге эреләтелгән колхоз умарталығында тәжрибәле умартсы Балагов Зәһит эшләй. Ул эшләй башлағанда, колхоздың ни бары 5 кенә көслө умартаһы бар ине. Хәҙер ул, иптәш Балаговтың тырыш хеҙмәте арҡаһында, 150-гә еткерелде.

Иптәш Балагов умартасылыҡты һан яғынан үҫтереү менән бергә, уларҙан күберәк доход алыу өсөн дә ҙур хәстәрлек күрә һәм умарталарҙан бал алыуҙы йылдан-йыл арттыра бара. Мәҫәлән, 1948 йылда һәр бер умартанан — 46 килограмм, 1949 йылда — 48, ә 1950 йылда 52-шәр килограмм бал алды. 1951 йылда ул һәр бер умартанан 60 килограмм бал алып бирергә йөкләмә алды.

Былтыр бал алыу планын арттырып үтәгән өсөн колхоз правлениеһе иптәш Балаговҡа өҫтәмә хеҙмәт хаҡы тәртибендә 22 бот бал бирҙе.

Ф. Исламов.

Яңы төҙөлөштәр

Белорет районындағы эшселәр поселкаларын, урман участкаларын һәм колхоздарҙы электрләштереү эше көндән-көн үҫә.

Хәҙер райондағы 4 эшселәр поселкаһы, 3 урман участкаһы, 5 колхоз ауылы тулыһынса электрләштерелде. Тағы ла ике урман участкаһында, бер эреләтелгән колхозда электр станцияһы төҙөү өсөн әҙерлек эштәре алып барыла.

«Победа», Сталин, Молотов исемендәге эреләтелгән колхоздарҙа тиҙҙән типовой проекттар буйынса общественный малдар өсөн торлаҡтар төҙөү эше башланасаҡ.

А. Ғәлимшин.

Өс мең һум файҙа

Стәрлебаш районындағы «Яңы тормош» инвалидтар артеле коллективы быйыл үҙенең эшендә ныҡ ҙур боролош яһаны. Ул, бер нисә йылдар буйына эшләмәй торған двигателде ремонтлап, столяр цехы асты һәм таҡта ярыу эшен ойоштороҙо. Был цех коллективы, I кварталда мебелдәр етештереп, артелгә 3 мең һум файҙа килтерҙе.

Артель коллективының яҙғы сәсеү кампанияһында районның колхоздарына күрһәткән ярҙамы ҙур. Ул бөтәһе 48 стан арба тәгәрмәсе һәм 110 стан тәгәрмәс туғыны етештерҙе. Быларҙың бөтәһе лә районның Ворошилов, Сталин, Маленков һәм Ленин исемендәге эреләтелгән колхоздарға бирелде.

Артелдә шулай уҡ күмер яндырыу цехы эшләй. Ул колхоз тимерлектәре өсөн күмер яндыра.

В. Хәлитов.

„Ҡыҙыл байраҡ" промартеле алдынғылыҡ өсөн көрәшә

Бөрйән районы «Ҡыҙыл байраҡ» промартелендә эш яҡшы ойошторолған. Артель члендәре ярышып эшләп, юғары хеҙмәт күрһәткестәре бирәләр. Бында 1951 йылдың I кварталында производство планы 136 процентҡа үтәлгәйне. Икенсе кварталда ла эш яҡшы бара.

Артель члендәренән Б. Тулумғужин, И. Йосопова, Ғ. Ғәбитова, К. Әминева һәм башҡа иптәштәр көндәлек нормаларын 130—140 процентҡа үтәп, һоҡланғыс хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Коллективта стахановсылар һаны әленән-әле арта бара.

Артель урынлашҡан Ғәлиәкбәр ауылында культура-ағартыу эштәре яҡшы ҡуйылған. Матур итеп йыһазландырылған клуб бар. Бында художестволы үҙ эшмәкәр түңәрәге тарафынан йыш ҡына спектакль ҡуйыла, кисәләр ойошторола. Шулай уҡ шахмат-шашка уйындары булдырылған.

Клуб эргәһендә библиотека эшләй. Ул күп кенә политик һәм художестволы әҙәбиәт менән тәьмин ителгән. 17 исемдә 25 дана үҙәк, өлкә газета һәм журналдар алдырыла. Клубта радиоприемник бар. Артель члендәре көн һайын Мәскәү һәм Өфө тапшырыуҙарын тыңлайҙар.

Культура-ағартыу эштәренең яҡшы ҡуйылыуы артелдә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә ҙур ярҙам итә.

С. Сәйфуллин.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Күгәрсен районы «Серп и молот» колхозы члендәре колхоздың емеш-еләк баҡсаһын киңәйттеләр. Баҡсаның дөйөм майҙаны 7 гектарға еткерелде. Баҡсала эшләү өсөн махсус бригада төҙөлдө. Был бригада менән тәжрибәле баҡсасы иптәш Баянов етәкселек итә. Улар быйыл баҡсасылыҡтан 15 мең һум доход алырға һүҙ бирҙеләр.

Х. Дәүләтшин.

* * *

Әлшәй районы Ғәйнә ете йыллыҡ мәктәбе уҡыусылары баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыуҙа Сталин исемендәге колхозға яҡындан ярҙам иттеләр. Быйыл уҡыусылар көсө менән колхоз баҫыуҙарына 10 гектарға яңын ағас үҫентеләре ултыртылды.

М. Нагаев.

* * *

Былтыр **«Главлессомин»**дең Башҡортостан конторaһы Иглин районында ағас орлоҡтары йыйнау буйынса яңы участка ойошторғайны. Участка тәүге йылда уҡ яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Участка государствоға 7 тонна ҡайын орлоғо, 3 тонна акация, 2 тонна имән сәтләүеге һәм 315 килограмм ҡарама ағасы орлоғо тапшырып, йыллыҡ планды 200 процентҡа үтәне.

Орлоҡтарҙың сифаты яҡшы. Улар илебеҙҙең төрлө райондарына — Сталинград, Омск, Томск, Ҡазан, Верхнеуральск һәм Тула ҡалаларына һәм башҡа урындарға ебәрелде.

Ғ. Үмәркәй.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 11 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 11 майҙа дүрт держава сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары үҙҙәренең 49-сы ултырышына йыйналдылар. Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

СССР вәкиле Громыко тарафынан 10 майҙа индерелгән тәҡдимдәр дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре Советының көн тәртибе буйынса килешеүгә тиҙерәк өлгәшеү менән ҡыҙыҡһынған Францияның киң общественноҫының иғтибар үҙәгендә торалар. Килешеүгә өлгәшеү министрҙарға тыныслыҡты тәьмин итеүҙең һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте нығытыуҙың килеп тыуған мәсьәләләрен тикшереү өсөн йыйналырға мөмкинлек бирер ине.

Беренсе булып сығыш яһаған Великобритания вәкиле Дәвис «ҡоралланыуҙарҙа СССР-ҙың ғәйәт өҫтөнлөк алып тороуы» тураһында ялған баҫнялрҙе яңынан ҡабатланы. Быны менән Көнбайыш державаларҙың идара итеүсе түңәрәктәре үҙҙәренең ҡоралланыуҙар артынан ҡыуыу һәм Германия милитаризмын аяҡҡа баҫтырыусы агрессив политикаһын йәшерергә маташалар.

А. Громыко сығышы

Унан һуң СССР вәкиле Громыко сығыш яһаны. Ул 10 һәм 11 майҙағы ултырыштарҙа Франция, Великобритания һәм АҠШ вәкилдәре тарафынан әйтелгән фекерҙәр айҡанлы бер нисә иҫкәртеү яһаны.

Ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса совет тәҡдимен ҡабул итеү, йәнәһе, көнбайыш державалар өсөн ҡыйын, сөнки Советтәр Союзының «бик күп һанда ҡоралды көстәре» бар, тип раҫлаған Пародиға яуап бирел, Громыко былай тине:

— Был дәлил, беҙ бер нисә тапҡыр күрһәткәнсә, бөтөнләйгә ышандырырлыҡ түгел. Көнбайыш державалар ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуҙы ысынлап та теләһәләр, улар совет тәҡдимен ҡабул итергә тейештәр ине, сөнки ул бөтә дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен, шул иҫәптән Советтәр Союзының ҡоралды көстәрен дә ҡыҫҡартыуҙы күҙҙә тота.

Кореялағы ваҡиғалар тураһындағы мәсьәлә буйынса Пародиҙың 10 майҙа яһаған сығышына иптәш Громыко ентекле рәүештә туҡталды. Пароди был ваҡиғаларға һылтанып ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһында совет тәҡдименә ҡарата өс держава позицияһын аҡларға маташҡайны. Громыко былай тине: — Һеҙ, Пароди әфәнде Кореялағы ваҡиғаларҙы һәм уларҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәрен нисек кенә баһаламағыҙ ҙа, Корея территорияһындағы интервенцияны Америка ғәскәрҙәренең тормошҡа ашырыуының һәм Корея территорияһында совет ғәскәрҙәренең булмауының ябай һәм бәхәсһеҙ фактынан бер ҡайҙа ла китә алмаҫһығыҙ. Шуға күрә Франция, АҠШ һәм Великобритания вәкилдәренең был дәлилен дә СССР, АҠШ, Франция һәм Великобританияның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса асыҡ һәм ябай совет тәҡдименә ҡаршы килеү өсөн әленән-әле яңы яһалма һәм нигеҙһеҙ һылтаныуҙар табырға маташыу итеп кенә баһаларға мөмкин.

Дәвистең, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы пункттың айырым формулировкалары араһындағы айырма тик мәсьәләләрҙе пункттың үҙ эсендә нисек урынлаштырыуҙан ғына тора, тигән раҫлауына туҡталып, Громыко былай тип белдерҙе:

— Дәвис совет делегацияһы менән өс держава вәкилдәре араһында был мәсьәлә буйынса айырымлыҡтарҙың асылын дөрөҫ күрһәтмәне. Билдәле булыуынса, совет делегацияһы дүрт державаның: СССР, АҠШ, Великобритания һәм Францияның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарарға тәҡдим итә. Ә өс держава вәкилдәре был тәҡдимде дүрт державаға ҡағылыуына ҡаршы киләләр, һәм ғөмүмән ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһында һөйләйҙәр. Был — ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуға ҡағылған пункт эсендә айырым положениеларҙы урынлаштырыу сиктәренән сығыусы мәсьәлә.

Дәвистең, Германияны демилитаризациялау тураһындағы пункты ҡайҙа урынлаштырыуға ҡарата кәңәшмәлә ҡатнашыусылар дөйөм фекергә килмәгәс, был пункты килешелмәгән текст итеп индерергә кәрәк, тигән белдереүенә ҡағылып, Громыко былай тине:

—Совет делегацияһы, Германияны демилитаризациялауға ҡағылған пункттың килешелмәгән текст итеп индерелеүе тураһында һүҙҙең дә булыуы мөмкин түгел, тип белдереүҙе кәрәкле тип иҫәпләй. СССР делегацияһы, Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләгә көн тәртибендә уның әһәмиәтенә ярашлы булған урын бирелергә тейеш, тигән фекерҙә тора.

Атлантик пакт һәм сит территорияларҙа Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләгә күсеп, Громыко былай тип белдерҙе:

— Совет делегацияһы, был пункттың, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуға ҡағылған пункт кеүек үк, Министрҙәр Советына килешелмәгән пункт итеп тапшырылыуына ҡаршы килеү өсөн бер ниндәй ҙә нигеҙлектәр юҡ, тип иҫәпләй. Министрҙәр Советына бер мәсьәләне килешелмәгән пункт итеп тапшырырға мөмкин булғас, ни өсөн икенсе пунктты ла тапшырырға ярамай? Өс держава вәкилдәре, йәнәһе Төньяҡ-атлантик пакттың 12 ил араһында төҙөлөүе, ә бында тик дүрт кенә илдең вәкиле булыуы совет тәҡдимен ҡабул итеүгә ҡамасаулыҡ итә, тип күрһәтәләр. Ләкин был дәлил ике сәбәп буйынса бөтөнләйгә нигеҙһеҙ булып тора: беренсенән, был группировканы төҙөү инициаторҙары булып торған АҠШ, Великобритания һәм Францияның Төньяҡ-атлантик группировкала уйнаған ролдәре яҡшы билдәле. Икенсенән, беҙ бында тыныслыҡ договорҙарына, атап әйткәндә, был договорҙарға бында вәкилдәре булған дүрт держава ғына түгел, ә бик күп илдәрҙең ҡул ҡуйыуҙарына ҡарамаҫтан, Италия менән тыныслыҡ договорына, шулай уҡ Болгария, Венгрия һәм Румыния менән тыныслыҡ договорҙарына ҡағылған мәсьәләләрҙе лә көн тәртибенә индерергә риза булдыҡ бит. Был хәл өс держава вәкилдәренә Болгария, Венгрия һәм Румыния менән тыныслыҡ договорҙары тураһындағы мәсьәлә буйынса үҙ тәҡдимдәрен дүрт держава министрҙәре Советының тикшереүенә индереү өсөн дә ғына ла ҡамасаулыҡ итмәне. Атлантик пакт тураһындағы мәсьәләне ҡарауға ни өсөн был ҡамасаулыҡ итергә тейеш?

* * *

Унан һуң сығыш яһаған АҠШ вәкиле Джессеп Көнбайыш державаларҙың делегациялары үҙ-ара һүҙ ҡуйышып эшләгән тәҡдимдәрҙе яҡлауҙы дауам иттерҙе. Ул шунан тора: совет делегацияһына ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәлә буйынса өс держава формулировкаһын ҡабул итергә тәҡдим ителә (был, дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы мәсьәләне ҡарауҙан баш тартыу менән бер тигеҙ), һәм ул ваҡытта инде Германияны демилитаризациялау тураһындағы пунктҡа «уның әһәмиәтенә ярашлы булған урын» биреләсәк. Әгәр ҙә инде СССР делегацияһы был тәҡдимде кире ҡаҡһа, Германияны демилитаризациялау тураһындағы пункт артҡы планға ҡуйыласаҡ йәки көн тәртибендә уның тураһындағы мәсьәлә асыҡ ҡалдырыласаҡ.

Джессеп сығышынан һуң ултырыш ябылды.

* * *

ПАРИЖ, 12 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһендә Великобритания вәкиле Дәвис председателлек итте.

Беренсе булып сығыш яһаған Джессеп һәм Дәвис Германияны демилитаризациялауға ҡағылған формулировка көн тәртибенең беренсе пунктында булған мәсьәләләр иҫәбендә артҡы планға ҡуйылыуы йәки көн тәртибендә был формулировканың урыны тураһындағы мәсьәләнең министрҙәр Советы ҡарамағына тапшырылыуы тураһында өс делегация тәҡдимен яҡлауҙы дауам иттерҙеләр.

Джессеп һәм Дәвискә яуап бирел, Громыко былай тине:

— Хәл асыҡ. Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәлә уның формулировкаһы яғынан килешелгән, ләкин көн тәртибенең беренсе пункты эсендә уның урыны яғынан килешелмәгән. Совет делегацияһы беренсе пункттың эсендә конкрет положениелар иҫәбендә Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләнең беренсе урынға ҡуйылыуын тәҡдим итә.

Икенсе тапҡыр сығыш яһаған Джессеп, Германияны демилитаризациялау тураһындағы пунктҡа ниндәй урын бирелергә тейеш булыуы тураһындағы мәсьәләне килешелмәгән мәсьәлә итеп Министрҙәр Советы ҡарамағына тапшырыуҙы СССР делегацияһының ни өсөн теләмәүен мин «аңламайым», тип белдерҙе.

Франция вәкиле Пароди үҙенең сығышында Германияны демилитаризациялау тураһындағы пункттың көн тәртибендә алып торорға тейешле урыны тураһындағы мәсьәләнең дүрт министр ҡарамағына тапшырылыуын талап итте. Пароди шулай уҡ Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне хатта көн тәртибенең килешелмәгән өлөшөнә лә индереүгә ҡаршы килеүҙе дауам итте.

Дәвис шундай уҡ рухта сығыш яһаны.

Пароди һәм Дәвистең ҡаршы килеүҙәренә яуап бирел, Громыко былай тине:

— Германияны демилитаризациялау тураһындағы пунктҡа ниндәй урын бирелеү кәрәклеге хаҡындағы мәсьәләлә беҙҙең позициябыҙ бик асыҡ әйтелде, һәм мин беҙҙең тарафтан әйтелгән нәмәләргә ниндәй ҙә булһа өҫтәмәләр яһауҙың кәрәк булыуын күрмәйем. Беҙ, был мәсьәлә формулировка яғынан булһын, шулай уҡ көн тәртибендә уға бирелергә тейеш булған урын яғынан булһын, беҙҙең кәңәшмәбеҙҙә тулыһынса килешелергә тейеш, тип иҫәпләйбеҙ.

Башҡорт АССР-ы буйынса 1951 йылда янғын сығыу ҡурҡынысы булған осорға ҡарата әҙерлек саралары тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының 1951 йыл 18 апрель ҡарары

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы **ҡарар итә:**

1\. Башҡорт АССР-ы Эске эштәр министерствоһын (иптәш Фирсановты), хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала, район һәм поселка Советтәре исполкомдарын түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итергә:

а) бер ай срокта урындары Советтәрҙең депутаттары, актив һәм предприятиеларҙың инженер-техник работниктәре көсө менән бөтә предприятиеларҙа, учреждениеларҙа һәм ойошмаларҙа, базаларҙа һәм складтарҙа, шулай уҡ коммуналь, культура-көн-күреш учреждениеларында, МТС, совхоз һәм колхоздарҙа янғынға ҡаршы эштең торошона һәм янғынға ҡаршы сараларҙың үтәлешенә тикшереү үткәрергә һәм тикшереү һөҙөмтәләрен район, ҡала Советтәренең исполкомдары ултырыштарына ҡуйып тикшерергә;

б) шул уҡ срокка янғынға ҡаршы инвентарҙарҙы, транспорт һәм башҡа кәрәкле нәмәләрҙе боевой әҙерлек хәленә килтерергә, шулай уҡ пожарный депоһын, һарайҙарын „ремонтлап ҡуйырға;

в) янғынға ҡаршы специаллаштерелгән командаларҙың һәм ирекле дружиналарҙың составын комплектовать итергә һәм уларҙың квалификацияһын күтәреү буйынса семинарҙар үткәрергә;

г) һыу ятҡылыҡтарын, быуаларҙы махсус рәүештә тикшерергә һәм уларҙы төҙөү һәм һыу ятҡан урындарға инеү юлдарын булдырыу өсөн тейешле саралар күрергә;

д) СССР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1940 йыл 22 март 385-се номерле ҡарары менән раҫланған, ирекле пожарный обществоһының типовой Уставына ярашлы рәүештә, республиканың ҡалаларында, эшселәр поселкаларында һәм район үҙәктәрендә 15 майға тиклем ирекле пожарный обществоларын төҙөргә;

е) 1 июнгә тиклем торлаҡ йорттарында янғындан һаҡланыу буйынса общественный вәкилдәр һайлау үткәрергә.

2\. Район, поселка, ауыл Советтәре исполкомдарына һәм колхоздарҙы түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итергә:

а) эреләтелгән колхоздар масштабында ауылдағы ирекле пожарный дружиналарын ҡарап сығырға һәм уларҙы, Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының 1949 йыл 28 сентябрь 933-сө номерле ҡарары менән билдәләнгән нормала, янғынға ҡаршы инвентарҙар һәм йыһаздар менән комплектовать итергә;

б) халыҡ йәшәй торған һәр бер урында пожарный депола-һарайында, был мәсьәлә буйынса йәшәп килгән Положениеға ярашлы рәүештә, тәүлек буйына дежурство ҡуйырға.

3\. Район Советтәре исполкомдарын үҙҙәренең ултырыштарында: кеше йәшәй торған урындарҙа, колхоздарҙа, совхоздарҙа һәм МТС-тарҙағы пожарный деполары-һарайҙарының яңы төҙөлөштәре планын ҡарарға һәм раҫларға мәжбүр итергә.

4\. Башҡорт АССР-ы Эске эштәр Министерствоһын һәм район Советтәре исполкомдарын ауылдағы ирекле пожарный дружиналарының бөтә начальниктәрен әҙерләү һәм ҡайтанан әҙерләү эшен ойошторорға һәм уны үткәрергә мәжбүр итергә.

5\. Государство именселеге министерствоһының милиция Управлениеһын (иптәш Матюгинде) ҡалаларҙа һәм ауыл ерҙәрендә янғынға ҡаршы, хәүефһеҙлекте нығытыу эшендә милицияның участка инспекторҙарының актив ҡатнашлыҡ итеүен тәьмин итергә мәжбүр итергә.

6\. Был ҡарарҙың үтәлешен күҙәтеүҙе Башҡорт АССР-ы Эске эштәр Министре иптәш Фирсановҡа йөкмәтергә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы Председателе
Н. УРАЗБАЕВ.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының эштәрен башҡарыусы
С. ҠОРБАНҒУЛОВ.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 13 май. (ТАСС). К... халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 13 ... бөтә фронттарҙа ла Халыҡ армияһ... частәре Ҡытай добровольцтәре мен... ара тығыҙ хәрәкәт итеп, дошмандың ... атакаларын кире ҡағып, уға йәнле ... һәм техникала ҙур юғалтыуҙар ... тип хәбәр итте.

Халыҡ армияһының частәре дошм... 7 самолетын атып төшөрҙөләр.

Германия проблемаһын тыныс юл менән хәл итеү өсөн көрәштең Халыҡ-ара конференцияһында

ПАРИЖ, 13 май. (ТАСС). 12 майҙа Парижда Германия проблемаһын т... юл менән хәл итеү өсөн көрәштең ... ара конференцияһы асылды. Конференция эшендә Франция, Италия, Германия, Австрия, Англия, Бельгия, Дания, Голландия, Люксембург, Норвегия, Ф... дия, Швеция һәм Швейцария вәкилдәре ҡатнаша. Конференцияға килеү мөмкинлегенән махрум ителгән күп кенә ... тар хаттар ебәргәндәр, улар Германия проблемаһын тыныс юл менән хәл ... өсөн көрәшеүселәр менән үҙҙәренең ... лидар булыуҙарын белдерәләр.

Конференцияның 13 майҙағы ... ултырышында Англия парламенты элекке члены Плэттс-Миллс председателлек итте. Швейцарияның күренекле профессоры Андре Бонар үҙенең сығышында Көнбайыш Германияла милитаризмды ҡайтанан тыуҙырыу тыныслыҡ эше ... ниндәй ҙур ҡурҡыныс тәшкил ит... билдәләне. Үҙ тыуған иленә бер... һәм тыныслыҡ договорын тәҙ... герман халҡының көрәше тура... һөйләгән немец профессоры Ул... сығышын конференцияла ҡатнашыу... лар йылы ҡотланылар. Франция ... генерал Ле Корбилье, Көнбайыш Германияла ҡайтанан тыуҙырылған ... Америка империалистәренең уйы ... са Атлантик блоктың төп удар көсө ... лырға тейеш, тип билдәләне. ... ионъяла тыныслыҡтың яҙмышы, — ... не ул, — хәҙер Германия проблемаһын хәл итеүгә бәйләнгән. Тупиктан сығыу өсөн Потсдам килешеүҙәренә ... ҡайтырға кәрәк».

Конференция үҙ эшен дауам итә.

Данияла яңы хәрби заемдың уңышһыҙлыҡҡа осрауы

КОПЕНГАГЕН, 13 май. (ТАСС). ... белдерелгәненсә, Дания хөкүмәте 75 миллион крон суммаға яңы хәрби заем ... ғарҙы. Ләкин хөкүмәттең илде милитаризациялау политикаһы үҙгәрыуына ... сыҡҡан Дания халҡы был заем облигацияларын алыуҙан баш тарта.

Заемдың таратылыуына ҡағыл... «Кристелиг дагблад» газетаһы былай ... яҙа: «Яңы государство заемы уңышһыҙлыҡҡа осраны. Кисә подписка срогы ... мамланғас, финанс министерствоһы ... дында заем өсөн гарантия алған ... банкыһы берекмәләренең был заем ... дөйөм суммаһының байтаҡ өлөшөн ... реннең индерергә мәжбүр булғанлығы асыҡланды».

Совет спортсмендәре баскетбол буйынса Европа чемпионы исемен яулап алдылар

ПАРИЖ, 13 май. (ТАСС). 12 майҙа совет баскетболистәре баскетбол буйынса Европа беренселегенә Чехословакия командаһы менән финаль осрашыуҙа, ... малы көрәштә, 45:44 иҫәбе менән ота...

СССР командаһы бөтә ярыштарҙы ниндәй еңелеүһеҙ үткәрҙе һәм баскетбол буйынса Европа чемпионы исемен яулап алды.

Чехословакия баскетболистәре ярыштарҙа икенсе урынды алдылар. Өсөнсө урынға — Франция командаһы, ... тенсе урынға — Болгария спортсмендары сыҡты.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

БӨГӨН КИНОЛАРҘА:

«Октябрҙә» — ЯҢЫ БОЕЦТАР САФ... БАҪЫРҘАР».

«Салауатта» — көндөҙ — «СОВЕТ ... УАШИЯҺЫ». «ЯҢЫ ШАНХАЙҘА» кис — «МИНЕ КӨТ».

«Уралда» — «ИКЕ БОЕЦ».

Матросов исемендәге кинотеатр... «БЕРЕНСЕ СТАРТ».

Өфө ҡалаһының Чернышевский у... 70-се номерле йортта, 3-сө квартирала ... роусы гражданка Мәмәлиева Са... Мансур ҡыҙы шул уҡ йортта тороусы Мәмәлиев Мостафа Шәрип улы менән ... рылышыу тураһында эш ҡуҙғатты. Өфө ҡалаһы, Ленин районының 1-се у... ҡа халыҡ судында ҡараласаҡ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02484 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25 000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№ 95 (8812) 1951 йыл 16 МАЙ шаршамбы

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

Хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ТРАКТОРҘАРҘЫҢ КӨНДӨҘ ҘӘ, ТӨНДӘ ЛӘ ТУҠТАУҺЫҘ ҺӘМ ЮҒАРЫ ЕТЕШТЕРЕҮСӘНЛЕ ЭШЛӘҮЕНӘ ӨЛГӘШӘЙЕК! М. Мөхәмәдиев. — Алдынғы трактор бригадаһы (1-се бит).

И. Зарипов. — Төнгө сменала (1-се бит).

И. Абдуллин. — Ерекле МТС-ы ни өсөн насар эшләй? (1-се бит).

И. Кузнецов. — Урожай йыйнау кампанияһына төҙөк юлдар булдырырға. (1-се бит).

ПАРТИЯ ОЙОШМАЛАРЫНЫҢ ЭШ ТӘЖРИБӘҺЕНӘН: Ғ. Хәсәнов.—Промыселдың партия ойошмаһы—нефть өсөн көрәште ойоштороусы (2-се бит).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. А. Рудакова. — Сауҙа ойошмаларында растраталарға юл ҡуймаҫҡа. (2-се бит).

Х. Наумов.—Мәжит Ғафуриҙың дингә ҡаршы фекере. (2-3-сө биттәр).

АЛДЫНҒЫ ТӘЖРИБӘЛӘР ТРИБУНАҺЫ: А. Әхмәров. — Картуфтан юғары урожай алыу өсөн. (3-сө бит).

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ. Ғ. Ибраһимов.—3. Дала гиганты. (3-сө бит).

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ: П. Еремеев. — Кадрҙарға иғтибарһыҙ ҡараш. (3-сө бит).

Ф. Ғаянов. — Яңауыл районында. (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

КАДРҘАРҘЫҢ ЭКОНОМИК БЕЛЕМДӘРЕН КҮТӘРЕҮГӘ СЕРЬЕЗ ИҒТИБАР

Большевиктар партияһы етәкселегендә, иптәш Сталин юлбашсылығында совет халҡы бөтә донъя әһәмиәтле тарихи бурыстарҙы уңышлы хәл итә. Халыҡ хужалығын алға баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙең һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планы арттырып үтәлде. Экономика һәм культураның бөтә өлкәләрендә лә ғәйәт ҙур уңыштар яулап алынды.

Социалистик Тыуған илебеҙ яңы гранитоз үҫеш юлына инде. Тыныс ижади хеҙмәт менән шөғөлләнеүсе, коммунизмдың ғәләбәт бинаһын һалыусы героик совет халҡы үҙенең һынылған авангарды — коммунистар партияһы етәкселегендә тәбиғәтте үҙгәртеүҙең сталинсе планын тормошҡа ашыра, ғигант гидроэлектростанциялар, каналдар һәм һуғарыу системаларын төҙөй.

Большевиктар партияһы, коммунизм төҙөүҙең сталинсе бөйөк программаһын тормошҡа ашыра барып, Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтле күтәрелешен ойоштора. Быны өсөн кәрәкле булған бөтә мөмкинлектәр тыуҙырылған. Социалистик халыҡ хужалығыбыҙ беренсе класлы хәҙерге заман алдан техникаһы менән өҙлөкһөҙ ҡоралландырыла. Социалистик хужалыҡ системаһының бөйөк өҫтөнлөктәре был мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланыу өсөн бөтә шарттарҙы тәьмин итә.

Партиябыҙ Үҙәк Комитеты һәм иптәш Сталин тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы үтәүҙә кешеләр, кадрҙар хәл иткес роль уйнай. **«...Производство планы,** — тип әйтте иптәш Сталин, — **миллионлаған кешеләрҙең йөнле һәм практик эшмәкәрлеге ул. Беҙҙең производство планыбыҙҙың реаллеге — ул яңы тормош ижад итеүсе миллионлаған хеҙмәтсәндәр. Беҙҙең программабыҙҙың реаллеге — ул йәнле кешеләр, ул һеҙҙең менән беҙ, хеҙмәткә булған беҙҙең ихтыярыбыҙ, беҙҙең яңыса эшләргә әҙер булыуыбыҙ, планды үтәүгә беҙҙең баҙнатлылығыбыҙ».** Иптәш Сталиндең бынан 20 йыл элек әйткән был һүҙҙәре бөгөн дә яңы көс менән яңғырай.

Юлбашсыбыҙҙың был аҡыллы күрһәтмәһе партия ойошмалары өсөн һәм бөтә совет халҡы өсөн боевой программа булып [illegible]

[illegible] факультеттары ағзаһендә экономик семинарҙар эшләп килә. Бында политик һәм конкрет экономия буйынса йөкмәткеле лекциялар уҡыла. Был эшкә юғары уҡыу йорттарының әҙерлекле преподавателдәре йәлеп ителә.

Экономик семинарҙарҙы туранан-тура предприятиеләрҙә ойоштороуҙың әһәмиәте бик ҙур. Был етәксе работниктарҙың күберәк өләшеп йәлеп итеүгә һәм теоретик мәсьәләләрҙе предприятиеләрҙең практик эшенә бәйләп алып барырға мөмкинлек бирә. Был йәһәттән «Туймазынефть» тресы предприятиеләре партия ойошмаларының эше иғтибарға лайыҡлы. Мәҫәлән, беренсе номерлы промыселдың партия ойошмаһы яңы техниканы ҡыйыуыраҡ индереү һәм экономик күрһәткестәрҙе артабан яҡшыртыу маҡсатында, техник-экономик лекторий ойошторҙо. Лекторий нефтсе кадрҙар араһында ҙур популярлыҡ менән файҙалана. Һәр шаршамбы көндө эштән һуң ҡыҙыл мөйөшкә инженер-техник работниктар, мастерҙар, операторҙар, слесарҙар наубәттәге лекцияны тыңлау өсөн йыйналалар. Һәр бер лекция промыселдың производство бурыстарына нығыҡ бәйләп уҡыла.

Теоретик мәсьәләләрҙе предприятиеләрҙең эш практикаһы менән тығыҙ бәйләп алып барыу—кадрҙарҙың экономик белемдәрен күтәреүҙе маҡсатҡа йүнәлешле итеп ойоштороуҙың мөһим шарты ул. Тик шул ваҡытта ғына теорияны практикала дөрөҫ ҡуллана белеүҙе тәьмин итергә мөмкин. Шулай уҡ, экономик семинарҙарҙың һәм лекторийҙарҙың эш планында иң мөһим, предприятиеның эшен яҡшыртыуға ярҙам итерлек темалар ҡаралырға тейеш. Ләкин был мөһим талап күп урында үтәлеп етмәй әле.

Черниковск шырпы фабрикаһындағы экономик семинарҙың программаһында СССР шырпы промышленносе тарихе һәм башҡа шуның кеүек предприятиеның практик эшенә аҙ бәйләнешле булған темалар бар. Шул уҡ ваҡытта продукцияның сифатын яҡшыртыу, оборот средстволарының әйләнешен тиҙләтеү, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү методтары тураһындағы темалар ҡаралмаған. Ә был предприятиеләр эшендә мөһим экономик күрһәткес булып тора. Ишембай, Белорет предприятиеләре партия ойошмаларының эшендә лә бына шундай етешһеҙлектәр бар.

Кадрҙарҙың экономик белемдәрен күтә- [illegible]

Кадрҙарҙы социалистик общество үҫешенең экономик закондары менән ҡоралландырыу Тыуған илебеҙҙең артабан сәскә атыуын тәьмин итер, беҙҙең коммунизмға табан барыу темптарыбыҙҙы тиҙләтер.

Кадрҙарҙың экономик белемдәрен күтәреүгә серьез иғтибар!

ТРАКТОРҘАРҘЫҢ КӨНДӨҘ ҘӘ, ТӨНДӘ ЛӘ ТУҠТАУҺЫҘ ҺӘМ ЮҒАРЫ ЕТЕШТЕРЕҮСӘНЛЕ ЭШЛӘҮЕНӘ ӨЛГӘШӘЙЕК!

Алдынғы трактор бригадаһы

Иң тәүҙә ҡыҙыл байраҡ күренде. Уйһыу ерҙән күтәрелеп килгән тракторҙағы был байраҡ ошо машинала эшләүсе ике егеттең хеҙмәт батырлығын күрһәтеп тора.

Иптәш Хованцев етәкселегендәге был трактор бригадаһы Ленин исемендәге колхоздың III һәм IV баҫыусылыҡ бригадаларын хеҙмәтләндерә. Трактористар сәсеү башланғандан бирле смена нормаларын үтәү һәм арттырып үтәп киләләр. Яҙғы баҫыу эштәре осоронда бригадалағы һәр бер шартлы трактор менән уртаса 122 гектар ер эшкәртелергә тейеш ине. Хәҙер трактористар мең гектарҙан артыҡ ер эшкәрттеләр. Был һәр бер шартлы тракторға 150-шәр гектар самаһы тура килә тигән һүҙ.

Был уңыш бригадаға үҙенән-үҙе килмәне, әлбиттә. Уны трактористар колхозсылар менән ҡулға-ҡул тотоноп, намыҫлы эшләү менән яулап алдылар.

Бына 31-се номерлы тәгәрмәсле трактор. Быйыл ул тракторист И. Баймөрҙин һәм Дүшәнбаев иптәштәргә тапшырылған. Бригаданың башҡа члендәре кеүек үк, улар үҙҙәренә беркетелгән машинаны намыҫлы рәүештә сәсеүгә әҙерләнеләр. Ул яҡтыртыу средстволары менән йыһазландырылған. Трактористар кәрәк инструменттар һәм заправка яһау инвентарҙары менән тәьмин ителгәндәр. Баҫыусылыҡ бригадаһы трактористарға нормаль эшләү өсөн бөтә шарттарҙы тыуҙырған: агрегатты хеҙмәтләндереүгә дәими кешеләр бүленгән, яғыулыҡ, һыу һәм башҡа кәрәк-яраҡтар өҙлөкһөҙ ташылып тора. Ошолай хәстәрлек күреү машиналарҙың тәүлек әйләнәһенә туҡтауһыҙ эшләүен тәьмин итә.

Агрегаттың эше колхоздағы әҫкә тәртип нигеҙендә теүәл билдәләнгән сәғәттәрҙә башлана. Сменаларҙы алмаштырыу тиҙ һәм ойошҡанлыҡ менән үтә. Тракторист учетчик иптәш Сардина менән берлектә машинаға заправка яһай, уның механизмдарын майлай, бөтә частарын ныҡлап ҡарап сыға, йомшарған гайкаларҙы нығыта. Ошо уҡ ваҡытта ул үҙенең бригадиренән сменаға задание ала, агротехника талаптарын асыҡлай, сменала башҡарылырға тейешле булған эштең күләмен белә. Агрегатты хеҙмәтләндереүсе колхозсылар менән берлектә тағылма ҡоралдарҙы ҡарап сыға. Уларҙың туҡтауһыҙ эшкә яраҡлы булыуын тәьмин итеүҙе талап итә.

Бригада тупраҡты әҙерләү эшен күптән тамамлағайны. Һуңғы көндәрҙә ул сәсеү менән генә шөғөлләнде. 31-се номерлы трактор кеүек үк, бындағы бөтә машиналар ҙа яҡтыртыу средстволары менән йыһазландырылған. Һәр бер тәгәрмәсле тракторға өсәр ат сәскесе тағып, ә СТЗ-НАТИ тракторҙары сәскестәр, культиватор һәм 5-әр звено тырма йөрөтәләр. Ошолай итеп, бригадала көн һайын дүрт сәсеү агрегаты эшләп тора һәм тәүлек әйләнәһенә улар менән 100 гектарға тиклем ашлыҡ сәселә. Мәҫәлән, иптәш Дүшәнбаев үҙенең сменаһында нормаһын һәр ваҡыт арттырып үтәй.

Коммунист иптәш Балкин был трактор бригадаһында агитатор булып эшләй. Баҫыуға ул бик йыш килә. Күптән түгел ул һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ пландың үтәлеше һәм яңы заем тураһында бәсәдә үткәрҙе. Уның тарафынан регуляр рәүештә сығарылып торған стена газеталарында һәм боевой листоктарҙа алдынғыларҙың эш методтары яҡтыртыла, насар эшләүселәр тәнҡитләнә. Производство кәңәшмәһендә алдынғы тәжрибәне өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирелә.

Был бригадала эш бары тик яҡшы сифатлы итеп кенә башҡарыла. Дым һаҡлау өсөн тәүҙә тупраҡ ике яҡтан тырматылды. Унан һуң культивация үткәрелде. Бары тик шунан һуң ғына ашлыҡ сәселде. Баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары Ишмурҙин, Демин иптәштәр, шулай уҡ трактор бригадаһы бригадиры иптәш Хованцев эштең сифатын ентекләп күҙәтәләр. Бригада сәсеүҙе уңышлы тамамлап сыҡты. Социалистик ярышта алдынғылыҡты алғаны өсөн уға МТС дирекцияһының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды.

М. Мөхәмәдиев,

Зианчура районы.

Байраҡ өсөн көрәш

Сәсеү башланған осорҙоң тәүге көндәрендә беҙҙең «Совет» колхозы ҡойроҡта һөйрәлә ине. Трактор бригадаларын да көндәлек нормалар үтәлмәй, баҫыусылыҡ бригадалары эш графиктарын өҙә инеләр. ВКП(б)-ның район комитеты беҙгә был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә конкрет ярҙам күрһәтте. Колхозда булған бөтә көс, бөтә мөмкинлектәр яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, иң яҡшы агротехник шарттарҙа үтәп сығыуға тупланды. Правление члендары бригадаларҙа, баҫыу станында ҡуна ятып эшләй башланылар. Трактор бригадаларында төнгө эш ойошторолдо.

Ошо күрелгән киңкен саралар һөҙөмтәһендә беҙҙең «Совет» колхозы икенсе биш көнлөктә район буйынса беренсе урынға сыҡты һәм ВКП(б) райкомының һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алыуға өлгәште.

Беҙ инде был байраҡты ошо көндән бирле үҙебеҙҙең ҡулыбыҙҙа тотып килдебеҙ. Беҙ уны үҙебеҙҙә һаҡларға ҡарар иттек. Быны өсөн бригадалар, айырым колхозсылар араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Трактор бригадалары сәғәт графиге менән эшләп, юғары күрһәткестәр бирәләр. Трактористарҙан Кәримов, Уләмәев иптәштәр көн һайын берәр ярым норма үтәйҙәр.

Социалистик ярышта беренсе урынды Кагиров Хәжи бригадаһы алды. Был бригадала йәнле тартыу көсөн ныҡ файҙалана. Йәнле тартыу көстәре менән эшләүсе колхозсылар көндәлек нормаларын һәр ваҡыт арттырып үтәйҙәр.

Беҙҙең «Совет» колхозы үткән йыл башҡа колхоздарға ҡарағанда юғары урожай үҫтереп алды. Мең гектарҙан ашыу майҙанда беҙ гектарынан уртаса 16-шар центнер бойҙай үҫтереп алдыҡ. Айырым участкаларҙа урожай тағы ла юғарыраҡ булды. Ошо күрһәткестәр өсөн беҙҙең колхоз быйыл Мәскәүҙә үткәреләсәк Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә кандидат итеп раҫланды.

Быйыл беҙ үҙебеҙ сәскән ашлыҡтарҙан тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ. Яҙғы сәсеүҙе 9 майға — Еңеү көнөнә тамамланыҡ. Хәҙер беҙ пар һөрөү эштәрен тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн бөтә сараларҙы күрәбеҙ.

Ғ. Фәтҡуллин,

Учалы районы «Совет» колхозы председателе.

Төнгө сменала

Баймаҡ МТС-ының өсөнсө номерлы трактор бригадаһы «Ҡыҙыл Байраҡ» колхозын хеҙмәтләндерә. Был бригада менән танылған механизатор иптәш Рамазан Зарипов етәкселек итә. Бында сменаларҙың эше өлгөлө итеп ойошторолған. Бригадалағы 4 трактор ҙа электр менән тәьмин ителгән. Шул арҡала трактористар төнгө сменаларҙа ла машиналарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланалар. Тракторист Ильясов Мостафа, ярҙамсыһы Искужин Әхмәди иптәштәр төнгө сменала эшләйҙәр. Улар машиналарға техник тәрбиәне лә ваҡытында үткәрәләр. Шуның өсөн дә улар простой яһауҙың ни нәмә икәнен дә белмәйҙәр. Һөҙөмтәлә, ДТ—54 тракторы менән 10 көндә 130 гектар урынына, 278 гектар ер һөрҙөләр. Шул уҡ бригадала төнгө сменала эшләүсе Мырҙағилдин, ярҙамсыһы Арсланов иптәштәр СТЗ—НАТИ тракторы менән 10 көнлөк норманы 2 тапҡырға арттырып үтәп, байтаҡ яғыулыҡҡа экономия яһанылар.

«Победа» колхозын хеҙмәтләндергән иптәш Волковтың 8-се номерлы трактор бригадаһы ла төнгө сменала бер туҡтауһыҙ эшләй. СТЗ—НАТИ тракторында эшләүсе Харитонов, Толмачев иптәштәр көндәлек норманы 150—160 процентҡа үтәп, башҡаларға өлгө күрһәтәләр.

Бригада яҙғы баҫыу эштәре осоронда 780 гектар ер һөрөү планын 974 гектар итеп үтәне.

И. Зарипов.

ЮЛ ТӨҘӨҮ АЙЛЫҒЫ

Урожай йыйнау кампанияһына төҙөк юлдар булдырырға

Яҙғы баҫыу эштәре тамамланғас, урожай йыйнау кампанияһы башланғанға тиклем булған ваҡытты юл, күперҙәр төҙөү һәм ремонтлау өсөн файҙаланыу республикабыҙҙа традицион хәл булып әүерелде. Һәр йыл һайын Башҡортостан хеҙмәтсәндәре был мөһим эштә актив ҡатнашалар.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты быйыл да 10 майҙан 10 июнгә тиклем юл төҙөү һәм ремонтлау буйынса айлыҡ үткәрергә ҡарар итте. Был айлыҡта республикала бөтәһе 653 километр юл, 7850 погонметр күпер ремонтлау эше билдәләнде. Ә төҙөү эштәренә 43 миллион 100 мең һум аҡса тотолорға тейеш.

Был мөһим бурысты тормошҡа ашырыу өсөн юл эштәре работниктарынан да, район етәкселәренән дә колхоздарҙың эшсе һәм транспорт көстәрен максималь файҙаланыу буйынса бөтә сараларҙы күреү талап ителә.

Республиканың Саҡмағош, Илеш, Шаран, Йәрмәкәй, Шишмә, Бишбүләк, Белоҡатай, Яңауыл һәм башҡа районлары юл эштәре планын үтәүҙә йыл һайын ҙур ғына уңыштарға өлгәшәләр. Сөнки уларҙа район партия ойошмаһынан һәм район Советынан алып район һаулыҡ һаҡлау бүлеге һәм почта бүлексәләренә тиклем юл эштәре планын срогынан алда үтәү өсөн көрәшәләр. Был районлдарҙа эшселәр өсөн йыл һайын бөтә эш һәм ял итеү шарттары булдырыла.

Шуның өсөн быйыл да республика хеҙмәтсәндәре өсөн юл төҙөү айлығына бөтә әҙерлек эштәрен алдан, бөтәһенән элек эш урындарын, һәм инструменттарҙы әҙерләү, полотно һәм кюветтарҙы бүлеп ҡуйыу, юл бригадалары бригадирҙарын урындарға беркетеп, уларға инструктаж үткәреү мөһим шарт булып тора. Тик шундай сараларҙы үткәргәндә генә уңышты яулап алырға мөмкин.

Үткән йылда Өфө, Благовещен, Иглин, Борай һәм Ҡариҙел районлдарында колхозсылар массовый рәүештә эшкә сыҡҡас, һуңынан улар техник етәкселекһеҙ эшләнеләр. Эшсе көстәре ойошҡанлыҡ менән файҙаланылманылар. Һөҙөмтәлә күп колхозсылар нормаларын үтәмәнеләр. Бындай факттарға быйыл һис бер юл ҡуйырға ярамай. Киреһенсә, эш сифатына ныҡлы контроль булдырырға, нормаларҙы һәм бөтә техник шарттарҙы үтәүгә өлгәшергә кәрәк. Юл төҙөү һәм ремонтлау планын уңышлы үтәү 1951 йылғы урожайҙы ваҡытында, юғалтыуһыҙ йыйнап алырға мөмкинлек бирәсәк.

И. Кузнецов,

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ағзаһендәге юл управлениеһе начальнигы.

Яңы заемдың уңышы

Илебеҙҙә коммунизмдың бөйөк төҙөлөштәрен тиҙләтеү һәм тормошобоҙҙоң артабан сәскә атыуы өсөн эшселәр, хеҙмәткәрҙәр, колхозсылар, специалистар үҙҙәренең хеҙмәт һаҡлыҡтарын государствоға үтескә ҙур шатлыҡ менән бирәп торалар.

РСФСР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең Государство заемын урынлаштырыу буйынса республикабыҙҙың ҡалаларынан Ишембай, Октябрьский, Белорет ҡалалары алдынғылар сафында бара. Өфө ҡалаһының районларынан алдынғылар рәтендә Дим, Киров, Ленин районлары.

Ҡырмыҫҡалы, Илеш, Матрай, Бөрйән, Бүздәк, Дәүләкән, Дүртөйлө, Учалы, Шаран һәм башҡа күп кенә районларҙа колхоз крәҫтиәндәре араһында яңы заем урынлаштырыу ҙур ойошҡанлыҡ менән үтә.

Ауыл эшсәндәре яңы заемға яҙылыу менән бер рәттән, подписка суммаларын аҡсалата срогынан алда индереүҙе киң йәйелдерәләр. Подписка суммаларын аҡсалата индереү Баймаҡ, Бөрйән, Бүздәк, Дүртөйлө, Саҡмағош, Маҡар, Хәйбулла, Шишмә, Краснокам, Илеш, Бишбүләк, Ҡырмыҫҡалы районларында айырыуса уңышлы бара. Был районларҙың колхозсылары яҙылған суммаларының байтаҡ өлөшөн аҡсалата индерҙеләр.

Заемға яҙылыу ҙур күтәренкелек менән дауам итә.

Подписка суммаларын индерҙеләр

Петровск. (Телефон аша). Маҡар районының Ҡаҙан ауыл Советына ҡараған, «Ҡыҙыл Байраҡ» колхозы колхозсылары яҙғы баҫыу эштәренә ойошҡан рәүештә тотоноп, иртә культуралар сәсеүҙе районда беренсе булып, ете эш көнөндә тамамланылар. Хәҙер колхозда һуңғы культуралар сәселә, пар һөрелә.

Колхозсылар социалистик ауыл хужалығының артабан сәскә атыуы өсөн намыҫлы хеҙмәт итеүҙәре менән бергә, үҙҙәренең һаҡлыҡтары менән дә актив булышлыҡ күрһәтәләр. Улар яңы заемға юғары рух күтәренкелеге менән яҙылып, бөтә подписка суммаларын шул көндө үк аҡсалата индерҙеләр.

Ерекле МТС-ы ни өсөн насар эшләй?

Договорға ҡул ҡуйғанда, Ерекле МТС-ының директоры иптәш Сәхибгәрәев Маленков исемендәге колхоздың председателе Сөләймәновҡа ышандырырлыҡ итеп:

— Ете-һигеҙ көндә иртә культураларығыҙҙы бына тигән итеп сәсеп бөтөрәрбеҙ. Һин инде минең һүҙемә ышан, мин алдарға яратмайым, — тине.

Былтыр ғына ике йыллыҡ мәктәп тамамлап ҡайтҡан йәш председатель Сөләймәнов, тәжрибәле МТС директорына ҙур өмөт менән ҡараны. «Бөтә терәк һеҙҙә, иптәш Сәхибгәрәев. Колхоз ҙурайҙы, ҡатмарланды» — тине ул договорҙы ҡәҙерләп түш кеҫәһенә һалғанда.

Күҙелһеҙлек сәсеүгә төшкәндең беренсе көнендә үк башланды. Ҡеүәтле ДТ — 54 тракторы өс урынына ике сәскес кенә тағып ҡуҙғалып китте. Бригадир Мөхәмәтшин:

— Өсөнсө сәскестең валы яраҡһыҙ, — тине. Сөләймәновты был яуап ҡәнәғәтләндермәне.

— Ә ҡыш буйы нәмә ремонтланығыҙ? Нинә комиссия ҡабул итте һуң? Бригадир, бөтә һауаны бер юлы һуларҙай булып, тарав итеп тын алды.

— Дирекция ҡушҡас комиссия ҡабул итә инде ул. Юғиһә план үтәлмәй ҡала бит...

Сөләймәновтың ҡырҡа һүҙҙәренә иптәш Сәхибгәрәев телефондан асыҡ тауыш менән яуап бирҙе.

— Вал? Пустяк ул. Килһендәр ҙә алһындар...

Кер айғыр 7 километр араны бик тиҙ урап ҡайтты, ләкин... МТС-та вал түгел, вал яһарлыҡ тимер ҙә юҡ ине.

Был осраҡлы хәл түгел. МТС яҙғы сәсеүҙә әҙерлекһеҙ ҡаршыланы. Ремонтланып бөтмәгән тракторҙар һәм машиналар МТС усадьбаһынан кеҫкә-кеҫкә генә сығарып ебәрелделәр. Беренсе көндәрҙән үк көн һайын 8 — 10 трактор ватылып эшһеҙ ултырҙы. Дирекция трактористарҙы, ә трактористар тракторҙарҙы ғәйепләнеләр. О дәрәҫә кем ғәйепле һуң? Ни өсөн МТС 7-8 көндә бөтөрәһе эшен 20 көндә лә эшләй алманы?

ВКП(б)-ның Шаран райкомы яҙғы эштәр башланыр алдынан сәсеүгә әҙерлекте тикшереү буйынса комиссиялар төҙөнө. Хатта сәсеү башланғас, бюро ултырышында МТС-тарҙың эштәре хаҡында махсус ҡарар ҙа ҡабул ителде. Формаль яҡтан һәр нимә үҙ урынында. Үткер тел менән һәм оҙон итеп яҙылған бөтә ҡарарҙар ҙа ҡағыҙҙа ҡалды. Иптәш Сәхибгәрәевкә ВКП(б) райкомының һәм район Советы исполкомының һәр бер ултырышында тиҙерлек «шелтә», «ҡаты шелтәләр» бирелде, ә тракторҙар, элекке кеүек, әйләнгән һайын ватылдылар, көндәлек нормалар үтәлмәне, яғыулыҡ нормаһын тыш тотолдо.

Бына шул уҡ Маленков исемендәге колхоз. Был колхоз сводкала иң аҫта, 31-се урында тора. Дүрт трактор менән 15-16 көн эсендә бөтәһе 280 гектар ашлыҡ сәселгән. Етенсе номерлы СТЗ-НАТИ тракторы бер көн эшләп, икеә көн тик тора. Дүрт тракторҙың подшипниге иреген. Иртә культуралар сәсеүҙән өҙөләү алдында торғанлығы МТС дирекцияһына билдәле булғас, колхозға тағы ике трактор ебәрелә. Һәм бына 6 трактор бер көн эсендә 29 гектар бойҙай сәсә һәм бик аҙ ғына ер һөрә. Пугачев исемендәге колхозға ярҙамға килгән тракторҙарҙың һабаны ватыҡ, һөрә алмай. Ләкин был тревогалы хәл МТС етәкселәрен һис борсомай. Өлкән механик Ибраһимов, МТС директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары Маннуров иптәштәр ун көн буйы был колхозға килеп тә ҡарамайҙар. Йәш бригадир Мөхәмәтшин махсус курс бөтмәгәнлектән, дизель тракторын бөтөнләй белмәй, ә уға ярҙам итеүсе, өйрәтеүсе юҡ.

Бында кадрҙар менән эшләү һәм агитмассовый эш шундай насар ҡуйылған, хатта бер генә тракторис тә сәғәт графиге менән эшләмәй. Күп трактористар уның ни икәнен дә белмәйҙәр.

Густов бригадаһының учетчигы Шилкин Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеев методының нигеҙән торғанын да белмәй. Агит-массовый эштең түбән кимәлдә тороуы, социалистик ярыштың ойошторолмауы арҡаһында нормаһын үтәгән трактористар берәм-һәрәм генә осрай. Киреһенсә, бик йыш ҡына брак яһаған трактористарҙы күрергә була. МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағын алған иптәш Хәйруллин бригадаһының трактористы Хәрисов бригадир алдында 10 гектарлап ерҙе 12 сантиметр тәрәнлектә генә һөрә. Фәйзуллин бригадаһында 13,5 гектар ерҙе ватыҡ культиватор менән эшкәрткәләр. Бер аҙна эсендә генә бында 5-6 трактористың эше бракҡа сығарылған.

ВКП(б) райкомы сәсеү эштәре башланырҙан алда һәр бер трактор бригадаһын һәм уның бригадирын бюро ултырышында тикшереп раҫлағайны. Ләкин кадрҙар менән эшләү ошо сараһан ары китмәне. Трактористтың эше менән уның тракторы ватылғас ҡына ҡыҙыҡһыналар. Арала яҡшы эшләгән трактористарҙың эше башҡаларға билдәле түгел. Ярыш һөйләдереү биш көнлөк эште «темп таҡтаһына» яҙыуҙан ары китмәй. Айырыуса насар эшләгән бригадаларға практик ярҙам күрһәтелмәй.

— 27 апрелдән бирле беҙҙең бригадаға килеп ярҙам иткән кеше юҡ, — ти иптәш Мөхәмәтшин. Ә был бригадала күбеһе быйыл курсты тамамлаған йәш трактористар эшләй. — Иң ябай деталь өсөн дә МТС-ҡа барырға, МТМ мөдирен, өлкән механикте эҙләргә, һорарға, ялынырға тура килә, — ти тракторист Сәғитов.

— Беҙ Октябрьскийҙан 27 апрелдә килдек, — ти механик Креволапов, — һәм ошо ваҡыт эсендә МТС дирекцияһынан бер кешенең дә килеп һөйләшкәне, кәңәшләшкәне юҡ.

МТС күп кенә колхоздарҙа иртә культуралар сәсеүҙе өҙҙә. Хәҙер шундай һорау тыуа: был өҙөклектән сығыуға юл бармы? МТС яҡшы эшләй аламы? Һис һүҙһеҙ, ала. Быының өсөн эште иң элек трактор йөрөтөүсе йәнле кешеләрҙән башларға кәрәк һәм МТС директорын ВКП(б) райкомының бюроһында йәки район Советы исполкомы ултырышына саҡырып әрләү генә аҙ. Һәр МТС-тың көндәлек эш практикаһын тәрәнтен өйрәнергә, яраҡһыҙ эш стилен бөтөрөү өсөн яҡындан ярҙам итергә кәрәк. һәм иң мөһиме, трактористарҙың яҡшы эшләүе өсөн МТС дирекцияһына: уның директоры Сәхибгәрәев, урынбаҫары Маннуров, өлкән механик Ибраһимов, өлкән агроном Куприов иптәштәрҙең үҙҙәренә дөрөҫ, оператив етәкселек итергә кәрәк.

И. Абдуллин,

(үҙ хәбәрсебеҙ).

Ғ. Ноғманов.

«Сталинсе» газетаһының редакторы.

Партия ойошмаларының эш тәжрибәһенән

Промысланың партия ойошмаһы—нефть өсөн көрәште ойоштороусы

«ИшемБайнефть» трестының 1-се номерле промыслаһы республикабыҙҙың иң ҡарт промыслаларынан һанала. Башҡортостандың беренсе нефть фонтаны ошонда бәреп сыҡты. Хеҙмәт күрһәткестәре буйынса ла был коллектив бер нисә йылдар буйына беренселекте алып килә. Ул үткән йылда иптәш Сталинға яҙылған хатта алынған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәне һәм пландан тыш йөҙәрләгән тонна нефть сығарыуы тураһында илебеҙгә рапорт бирҙе.

Быйыл да промысланың нефтселәре производствоның эске резервтарын тулы файҙаланыу, социалистик ярышты киң йәйелдереү нигеҙендә бөтә алдынғы эш методтарын ҡулланып эшләү юлы менән нҫке промыслала нефть сығарыуҙы кәметмәҫкә, ә, киреһенсә, арттырырға йөкләмә алдылар.

Промысланың партия ойошмаһы үҙенең бөтә көсөн ошо изге йөкләмәне үтәүгә йүнәлдерә. Нефть сығарыу планын үтәүҙе хәл итеүсе участкаларҙың һәр береһендә ойошҡан һәм инициативалы партия группалары эшләй. Партия ойошмаһында иҫәптә торған 49 коммунист һәм 3 кандидат промысланың бөтә эш участкаларына бүлеп урынлаштырылдылар. Сөнки производствола партия кадрҙарын дөрөҫ урынлаштырыу планды үтәүҙә айырыуса ҙур роль уйнай. Промысланың партбюроһы (секретары иптәш Егоров) администрация менән берлектә цех етәкселәрен һәм мастерҙарҙы, уларҙың политик яҡтан әҙерлектәренә һәм хужалыҡ менән етәкселек итеү һәләтлектәренә ҡарап урынлаштыра. Быны бер нисә миҫал менән күрһәтергә мөмкин. Үткән йылда әрләтелгән 2-се номерле нефть сығарыу участкаһы бер нисә айҙар буйына нефть сығарыу планын үтәмәй килде. Партбюро был участкаһың эше менән ҡыҙыҡһына һәм ныҡлап тикшерә башланы. Һөҙөмтәлә, күптән түгел мастер дәрәжәһенә үрләтелгән иптәш Морозовтың ҙур коллектив менән ҡәнәғәтләнерлек етәкселек итә алмауы асыҡланы. Шунан һуң партбюро тәҡдиме буйынса был участкаға мастер итеп, быға тиклем беренсе участкала эшләүсе, ҙур тәжрибәле мастер иптәш Копылов билдәләнде. Ә иптәш Морозов уның участкаһын ҡабул итеп алды. Мастерҙарҙы алмаштырып ҡуйыу яҡшы һөҙөмтә бирҙе: ике участка коллективе лә планды арттырып үтәй башланы.

Промысланың партия ойошмаһы коллективта алдынғы эш методтарын индереү һәм сифат күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн әҙләкһеҙ көрәш алып бара. Үткән йылдың һуңғы айҙарында промыслала сығарылған нефть составында һыу күләме һиҙелерлек арта башлағайны. Партбюро был хәлдең сәбәбен тәүҙә инженер-техник работниктар менән берлектә ентекләп тикшерҙе. Сығарылған нефттең сифатын күтәреү мәсьәләһе бригада ағзалары йыйылыштарында ҡаралды. Был темаға агитаторҙар бәседәләр үҙгарҙылар. Һөҙөмтәлә коллективтың һәр бер ағзаһы сифат өсөн көрәште үҙенең төп бурысы итеп һанай башланы, һәм нефтселәр нефттең сифатын күтәреүгә йүнәлтелгән бик күп рационализаторлыҡ тәкдимдәр индерҙеләр. Мастер ярҙамсыһы иптәш Александрованың тәкдиме буйынса тоҙа нефть бирәүсе скважиналарҙың нефтен бер резервуарға, ә һыу ҡатыш нефть бирәүсе скважиналарҙың нефтен икенсе резервуарға йыйнап тонкторыу һәм һыуынан аҫҡа ултырған һыуҙы ағыҙып түгеү методы индерелде. Пластағы һыуҙы кәметеү өсөн махсус һыу сығарыу скважиналары хәрәкәткә ебәрелде. Был сараларҙы үҙгарғандан һуң быйыл беренсе кварталда промыслала сығарылған нефттең сифаты, планға ҡарағанда, 1,4 процентка яҡшырҙы.

Партия ойошмаһы промыслалағы скважиналарҙың фондын тулыһынса файҙаланыуға серьез иғтибар бирә. Хәрәкәт итеүсе скважиналар фондын эксплуатациялау коэффициенты 0,96 урынына 0,98-гә етте.

Партбюро ултырыштарында һәм коммунистарҙың дөйөм йыйылыштарында йыш ҡына производство мәсьәләләре ҡарала. 1951 йылда алған социалистик йөкләмәләрҙе беренсе айҙарҙан уҡ үтәй барыу өсөн партбюро үҙенең ултырышында, геологик бүлек работниктары менән берлектә, хәрәкәт итеүсе скважиналар фондын үстереү мәсьәләһен тикшерҙе. Быға тиклем тороусы скважиналарҙы хәрәкәткә ебәреү өсөн махсус график төҙөлдә. Агитаторҙар был скважиналарҙы хәрәкәткә ебәргәндә государствоға күпме өҫтәмә нефть биреләсәге тураһында коллективта бәседәләр үткәрҙеләр. 1950 йылда 26 скважина хәрәкәткә ебәрелде, ә быйыл беренсе кварталда ике скважина яңынан нефть сығара башланы. Улар өсөн кәрәк булған оборудованиеләр промысланың үҙендә табылдылар. Был скважиналар илебеҙгә уңарлаған тонна нефть бирҙеләр.

Промысланың нефтселәре, иптәш Кафаровтың гүзәл эш методын киҙәп ҡулланып эшләү һөҙөмтәһендә, скважиналарҙың ремонт-ара эшләү срокторын бик күпкә арттырҙылар. Хәҙер промыслалағы скважиналар фондының 90 проценты комплекслы тикшереүҙәр нигеҙендә оптималь режимда эшләй. Ә был, оборудованиеларҙы рациональ файҙаланып, скважина бирә алған нефтте тулыһынса алыуға килтерә. Партия ойошмаһы пластың нефть бирәүсәнлеген күтәреү өсөн интенсификация саралары үткәреү планының үтәлешен ҡаты контролгә алған. Һөҙөмтәлә һәр бер скважина буйынса нефть сығарыуҙы үстереү өсөн алдап билдәләнгән техник сараларҙың береһе лә үткәрелмәй ҡалғаны юҡ.

Билдәле, администрацияның хужалыҡ эшмәкәрлеген тулыһынса партия контроленә алыу—промысланың бөтә участкаларындағы һәм бригадаларындағы эштең торошон яҡшы белеүҙе талап итә. Партия бюроһы һәм уның секретары иптәш Егоров партия группаларын нығытыу, парггрупоргтарҙы һәм активте әҙләкһеҙ тәрбиәләү юлы менән участкалардағы бөтә яңылыҡты үҙ ваҡытында белеп тора. Был партия ойошмаһына теге йәки был мәсьәлә буйынса үҙ ваҡытында тейешле ҡарар сығарырға мөмкинлек бирә.

27-се номерле скважинала торбалар өҙәлеү сәбәпле авария булғайны. Партбюро был авариялың сәбәптәрен икенсе көндә үк үҙенең күп актив ҡатнашлығында үткәрелгән ултырышында ентекләп тикшереп, тейешле ҡарар сығарҙы. Башҡа скважиналарҙа бындай аварияларҙы булдырмау өсөн көрәштә был ултырыштың әһәмиәте ҙур булды. Быйыл беренсе кварталда, үткән йыл менән сағыштырғанда, авариялар һаны 65 процентка кәмене. Был факт үҙ нәүбәтендә нефттең үҙенә төшөү хаҡын тағы ла 8 процентка кәметергә мөмкинлек бирҙе.

Партия ойошмаһы коллективта партия-политик эште киң йәйелдереүгә даими саралар күрә. Партия ойошмаһы тарафынан билдәләнгән 25 агитатор нефтселәр араһында бәседәләр үткәрәләр. Агитаторҙар өсөн аҙнаһына ике тапҡыр семинар үҙғарыла. Агитаторҙарҙан Моторин, Ғәйсин, Александрова һәм башҡа иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр.

Коллективтың производство активлеген күтәреүҙә партия ойошмаһы большевистик матбуғатты бөтә тулылығы менән өҫтә файҙалана. Участкаларҙа һәм промысланың ҡыҙыл мөйөшөндә стена газеталары регуляр сығарыла. Унда стахановсыларҙың яҡшы эштәрен күрһәтеү менән бергә етешһеҙлектәр ҡаты тәнҡитләнә.

Производствоның бөтә участкаларында ла коммунистар һәм комсомолецтар алдынғы сафта баралар һәм үҙҙәренең эш өлгәләре менән бөтә коллективты фиҙакәр хеҙмәткә дәртләндерәләр.

Был алдынғы коллективтың иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәне партия ойошмаһы етәкселегендә быйыл да намыҫ менән үтәп сығыуына һис шик юҡ.

Ғ. Хәсәнов,

ВКП(б) Ишембай ҡала комитетының инструкторы.

Баймаҡ колхоз-совхоз театры быйыл үҙенең 20 йыллыҡ юбилейен билдәләй.

Һүрәттә: драматург Я. Апушкиндең «Салауат Юлаев» тигән пьесаһынан бер күренеш. (Һулдан-уңға): БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Ғ. Абызгилдина, артистка Абитаева һәм артист Ф. Ғәләүетдинов.

А. Чэрвинский фотоһы.

Баймаҡ театрына 20 йыл

Баймаҡ Башҡорт государство колхоз-совхоз театрының ойошторолоуына ошо йылдың 15 майында 20 йыл тулды. Ул ошо ваҡыт эсендә бәләкәй генә коллективтан республикабыҙҙың ҙур һәм алдынғы колхоз-совхоз театрына әйләнде.

Театрҙы ойоштороуҙа РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы А. Мөбәрәков, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары М. Хәбибуллин, мәрхүм Ушанов, артист С. Сәитов иптәштәр күп көс һалдылар.

Баймаҡ Башҡорт государство колхоз-совхоз театры ошо көнгә тиклем башҡорт, рус совет яҙыусыларының һәм классиктарҙың 120-нән артығыраҡ әҫәрен сәхнәгә ҡуйҙы. Шулар араһынан С. Мифтаховтың «Балҡанда», «Һаҡмар», Мостай Кәримдең «Яңғыҙ ҡайын», М. Хәйҙәровтың «Ирәндек буйында», И. Абдуллиндың «Беҙ айырылышмабыҙ», Я. Апушкиндың «Салауат Юлаев», Ғ. Ибраһимовтың «Башмағым», Н. Гоголдең «Өйләнеү», Н. Островскийҙың «Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр» пьесалары һәм башҡалар тамашасылар тарафынан айырыуса яратып ҡаралалар.

Ошо 20 йыл эсендә театр бик ныҡ алға китте һәм унда талантлы артистар үҫеп сыҡтылар. Мәҫәлән, Б. Мәһәҙиева, Ғ. Сарбаев һәм башҡа иптәштәрҙе, аҡсыл хеҙмәттәре өсөн, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Почет грамоталары менән наградланы.

Театр училищеһын тамамлап сыҡҡан Хәбибуллина, Хәсәнов, Ишемғолова иптәштәр театрҙы үстереүҙә күп көс һалдылар. Шулай уҡ художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәктәренән үрләтелгән Ирназарова, Күрсәев, Мусина, Туйғонов, Баймурзин иптәштәр үҙҙәрендә үҫеүгә ҙур мөмкинлектәре барлығын күрһәтәләр.

Ғ. Абызгилдина,

Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған артисткаһы.

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Сауҙа ойошмаларында растраталарға юл ҡуймаҫҡа

1949 йылдың ноябрь айында СССР Министрҙар Советы Башҡорт АССР-ында сауҙа эшен яҡшыртыу буйынса махсус ҡарар ҡабул иткәйне. Һәм был ҡарар республикабыҙҙа сауҙа эшен яҡшыртыуға ҙур ярҙам итте. Һөҙөмтәлә үткән йылда сауҙа селтәре байтаҡ киңәйҙе.

Ләкин әлгәнселгән ҡайһы бер ыңғай яҡтар менән бергә, республикабыҙҙың государство һәм кооператив сауҙаһы ойошмаларының эшендә һаман да әле серьез етешһеҙлектәр йәшәп килә. Бигерәк тә сауҙа ойошмаларына осраҡлы элементтарҙың үтеп инеүе һөҙөмтәһендә общественный милкте туҙҙырыу, урлау факттары бар. Был государство алдында ҙур енәйәт булып тора. Баймаҡ, Учалы, Янаул, Благовар, Шишмә һәм башҡа райпотребсоюздарҙа, Черниковск торгында, Өфө ҡалаһының икенсе пищеторгында растраталар ҙур суммаларға барып етәләр.

Бындай енәйәттәрҙе иҫкәртеү һәм булдырмау саралары ваҡытында күрелмәй. Ә йыш ҡына ҡайһы бер сауҙа ойошмаларының етәкселәре урлашыу факттарын регистрациялау менән генә сикләнәләр. Хуш күңеллелектән һәм асыҡ ауыҙлыҡтан файҙаланып, жуликтар үҙҙәренең яуыз эштәрен эшләйҙәр. Ошондай бер фактты килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, 1950 йылдың майында, Әлшәй районының Әлшәй сельпоһы продмагына ревизия үткәрелгән. Ревизия магазин мөдире Сушинкаяның 9520 һум растрата яһағанлығын асҡан. Ләкин енәйәтсе шул килеүә эштә ҡалдырылған, растрата аҡсаһы юллап алынмай. Ә инде 1950 йылдың октябрендә үткәрелгән ревизия һөҙөмтәһендә Сушинкаяның 22.545 һум растрата яһағанлығы асылған, тик шунан һуң ғына енәйәтсе хөкөм яуаплылығына тартылған.

Айырым сельпо һәм сауҙа ойошмаларының етәкселәре урлашыуҙарға ҡаршы ныҡ көрәшеү урынына, киреһенсә, үҙҙәре был эштә ҡатнашлыҡ итәләр. Мәҫәлән, Янаул районында кооператив милкен урлаусы бер төркөмдөң енәйәтсе эше фаш ителде. Был төркөмдә сельпо председателдәре, иҫәп-хисап работниктары һәм ревизия аппараты ҡатнашҡан. Улар ялған документтар яһап, кооператив средствоһын урлау менән шөғөлләнгәндәр. Ялған накладнойҙар, счеттар яҙыу юлы менән быны оҙаҡ ваҡыт буйына йәшереп килгәндәр.

Енәйәтсел эштәре өсөн хөкөм ителгән кешеләрҙе яңынан эшкә алыу факттары ла юҡ түгел. Бөрйән районы системаһында растратчиктарҙы хөкөм яуаплылығына бирмәйенсә, растрата суммаларын түләтеп, эштә ҡалдырыу ваҡиғалары булды. Был хәл ҡабаттан растрата яһауға килтерә.

Сауҙа ойошмаларында растраталарҙың урын алып килеүе, беренсенән, кадрҙарҙы һайлап алыуға ныҡлы иғтибар ителмәүе хаҡында һөйләһә, икенсенән, контроль-ревизия эшенең һәм материаль ҡиммәттәр учетының түбән кимәлдә тороуы тураһында һөйләй. Контроль һәм учет эше яҡшы ҡуйылған урындарҙа сауҙа ойошмаларының финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеге лә бөтөнләй икенсе. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ районының Рязань сельпоһында ай һайын кәтелмәҫтән ревизиялар үткәреү һәм материаль ҡиммәттәрҙең учетын яҡшы ҡуйыу арҡаһында, сельпола урлашыуҙарға, әрәм-шәрәм итеүҙәргә юл ҡалдырылмай.

Растраталарға ҡаршы [illegible] троль-ревизия эшенең мөһим р[illegible] уына ҡарамаҫтан, был мәсьәлә[illegible] иғтибар бирелмәй әле. Үтк[illegible] Башҡортостан потребкооперация[illegible] темаһы буйынса документаль р[illegible] үткәреү планы үтәлмәне. Ревиз[illegible] раты кадрҙар менән тулыһынса [illegible] тәмин ителмәгән. Ревизия эшене[illegible] ла түбән әле. Ҡайһы бер ревизор[illegible] фынан сауҙа точкаларына [illegible] цияны формаль үткәреү, матери[illegible] мәттәрҙе ентекләп барлап сыҡм[illegible] тары бар.

Башҡорт АССР-ы Сауҙа ми[illegible] һы һәм Башпотребсоюз Правл[illegible] государство һәм кооператив м[illegible] тематик туҙҙырыуға юл ҡуйыу[illegible] күнелле етәкселәрҙе яуапҡа т[illegible] буйынса үҙ ваҡытында саралар к[illegible] Был хәл, сауҙа ойошмалары ет[illegible] нең персональ яуаплылығын б[illegible] ға килтерә. Урындағы хужа[illegible] бюджет учреждениеләренә, айыр[illegible] ларға кредитҡа тауар биреү ҡат[illegible] ған булыуға ҡарамаҫтан, ҡайһы [illegible] ҙа ойошмаларының етәкселәре [illegible] цинте тупаҫ рәүештә боҙалар. [illegible] Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, [illegible] Матрай һәм Туймазы райпотреб[illegible] уларға юл ҡуялар.

Потребителдәр кооперацияһы [illegible] һында һәм урындағы торгтар[illegible] кадрҙарҙы һайлап алыу эше [illegible] йылған. Улар йыл һайын алмаш[illegible] ралар. Мәҫәлән, 1950 йылда ра[illegible] союз председателдәренең 21 [illegible] сельпо председателдәренең 31 [illegible] алмашынған.

Сауҙа ойошмаларында государст[illegible] кен теүәл һаҡлауҙы тәьмин ит[illegible] материаль яҡтан яуаплы урындар[illegible] иҫәп-хисап эштәренә ышаныслы [illegible] никтарҙы һайлап алырға кәрәк. Ә [illegible] өсөн кадрҙар бүлектәренең эше[illegible] тырға, сауҙа эштәренә осраҡлы, [illegible] релмәгән, ышанысһыҙ кешеләрҙең [illegible] инеүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Контроль-ревизия эшен активл[illegible] һәм уның сифатын яҡшыртыуға, [illegible] таль һәм кәтелмәгән ревизияларҙы [illegible] тында үткәреп барыуға айырыуса [illegible] бәр бирелергә тейеш.

Тауар-материаль ҡиммәттәрҙе [illegible] торған инвентаризацияның сифатын [illegible] реүгә, уларҙы үткәреүҙә [illegible] срокторҙы аныҡ һаҡлауға [illegible] траталарҙы булдырмауҙа мөһим [illegible] лып тора.

Общественный, социалистик м[illegible] совет короллошоноң нигеҙе һәм [illegible] геҙе, хеҙмәтсәндәрҙең муҙ һәм [illegible] лы тормошо сығанағының [illegible] беҙҙең байлығыбыҙ. Социалистик [illegible] һаҡлау һәр бер совет кешеһенең [illegible] бурысы булып тора. Сауҙа ойошмала[illegible] ла общественный байлыҡты урлау[illegible] һәм урға юл ҡуйыусыларға ҡарш[illegible] бер либераллек, хуш күңеллелек [illegible] ләргә тейеш түгел.

Шулай уҡ хеҙмәтсәндәр депутат[illegible] ның урындағы Советтары исполком[illegible] нан сауҙа ойошмаларының һәм [illegible] предприятиеләренең эшенә контр[illegible] итеүҙе көсәйтеү талап ителә.

А. Руз[illegible]

Башҡорт АССР-ы Министрҙар [illegible] тенең сауҙа группаһы [illegible]

„Ҡыҙыл Башҡортостан“ материалдары буйынса

„Үгәйһетелгән мәктәп“

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 22-се номерендә Учалы районы Науруз башҡорт урта мәктәбенә ремонт үткәрелмәүе, уҡытыусыларҙың квартира менән тәьмин ителмәүҙәре һәм район Советы исполкомының был эшкә иғтибар бирмәүе тураһында хәбәр баҫылып сыҡҡайны.

Башҡортостан Мәғариф министерствоһының редакцияға хәбәр итеүенсә, «Үгәйһетелгән мәктәп» тигән хәбәрҙә асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә һәм эште яҡшыртыуға ҡарата практик саралар билдәләнгән. Башҡортостан Мәғариф министерствоһы, Науруз башҡорт урта мәктәбенә капиталь ремонт үткәреү өсөн, Учалы район Советы исполкомы председателенә, был мәктәпкә тейешле күләмдә аҡса бүлеү тураһында күрһәтмә биреүҙе һорап Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советына мөрәжәғәт иткән.

Мәжит Ғафуриҙең дингә ҡаршы фекере

Мәжит Ғафури — халыҡтарҙың азатлығы өсөн көрәшкән ҙур талантлы шағир, революцион демократ һәм материалист-философ.

Мәжит Ғафуриҙең донъяға ҡарашы, политик һәм философик фекерҙәре империализм эпохаһында, пролетариат революциялары эпохаһында һәм беҙҙең илдә социализмдең еңеү эпохаһында һуғарылып, әҙәби ҡалыптарға һалынғандар. Был яңы эпохаһың ҡатлаулы күренештәре, ҡанлы һуғыштары, пролетариат революциялары, колония халыҡтарының милли азатлыҡ өсөн көрәштәре Мәжит Ғафуриҙең ижадында сағылдылар, уның донъяға ҡарашына үҙҙәренең эҙҙәрен ҡалдырҙылар.

* * *

Беренсе рус революцияһы Ғафуриҙе ҡайнап торған политик көрәш майҙанына алып сыҡты. Мәжит Ғафури, Ғабдулла Туҡай һәм башҡа яҙыусылар үҙҙәренең политик ҡараштары менән большевик йүнәлештәргә яҡынлаштылар. большевиктар тәьҫирендә һуңға бороллолар, пролетариат идеологияһына яҡын килделәр.

М. Ғафури:

— Тамыр йәй! Ярат ер!
— Ҡурҡмай, тиҙ үҫ.
«Бәтәрмеп» тимә әй, дуҫ, булма мәйүс.
Ҡара алға. Һинең алдыңда яҡты,
Уның өҫтөнә хаҡлыҡ һеҙгә еҡлы.
Хакимәт ул шулай көүәтле, көслә
Уларҙың килтер, аҫтын-өҫкә.
Ҡапаң барҙыр һинең алда бәләтһеҙ,
Йәшәнһеҙ, ҡуҡраүһеҙ һәм ла үтһеҙ...

— тип яҙҙы үҙенең «Алдағы өмөт» тигән шиғырында.

Беренсе рус революцияһы еңелде. Ҡара реакция осоро башланды. Реакция йылдарында халыҡҡа ҡаршы контрреволюцион террорҙың хөкөм һөрөүенә һәм янги идеологияның, идеалистик философияның һөжүм итеүенә ҡарамаҫтан, Мәжит Ғафури халыҡты алға барырға, батшалыҡҡа ҡаршы көрәшкә саҡырҙы, халыҡ азатлығы өсөн көрәшеүселәрҙе хәҡиҡәттең еңәсәге менән дәртләндерҙе.

Хайуан кеүек ашауҙан башҡа нәмәне белмәгән муллаларҙы, бирән ҡорһаҡ Зәйнулла һәм Раям кеүек, ике аяҡлы паразит ишандарҙы:

— Бүтән ҡайғыһы юҡ, булһа тамаҡ туҡ,

Аһаҡ, әсер өсөн тыуған был мәхлүк, тип сәбәп тәнҡитләне («Сахибе кәрамәт»). «Һәр фәнгә мәһир мулла», «Татар ҡатыны» һәм башҡа шиғырҙарында ла муллаларҙың наҙанлыҡтарын, уларҙың реакцион ислам дине менән халыҡтың аяып алыулап тороуҙарын киҫкен фаш итте. Капитализм донъяһында күп кешеләрҙең «аҡсаға ҡол...» булыуҙарын, ер йөҙөндә «һары иблис» (алтын) закондары хөкөм һөргәнлектән, хәҡиҡәттең аҫҡа ҡалыуын, «Выжлая нцсаниәтен(ң)» тапалыуын күргән Мәжит Ғафури тәрән уйға сума, капитал менән хеҙмәт араһында булған көрәшкә күҙ һала.

— Йыйылмаҫ бер урынға һис ваҡыт
хаҡлыҡ менән алтын,
Улар бер-береһенә дошман, уларҙың араһы һалҡын...
Ер өҫтөндә ҡайсан алтын бөтөр, шунда сығыр хаҡлыҡ,
Түгел мөмкин быларҙың икеһен бер ергә йыймаҡлыҡ.

(«Хәҡиҡәт» — 1911)

Әнә шулай Мәжит Ғафури капитал менән хеҙмәт араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡты асып һалды. Ул үҙенең был философик шиғырында ҡуҡтан ергә төшкәнен, идеализмдән материализмға күсә башлағанын күрһәтә. Ғафуриҙең был философик шиғыры, шағирҙың донъяға ҡарашында бер нигеҙ момент булып тора.

1912—1914 йылдарҙа революцион хәрәкәттең күтәрелеүе тәьҫирендә Мәжит Ғафури идеализмдан материализмға күсеү аҙымдарын көсәйтте һәм асыҡтан-асыҡ пролетариат яғына сыҡты, үҙе үлгәнгә тиклем уның менән бергә барырға ант итте.

— **Кешеләргә бәхет эҙләп, һуғыш асыусылар бирле,**

Йәнем сыҡҡанса ауыҙымдан йөрермен һәр ваҡыт бергә, тине.

М. Ғафуриҙең был шиғырында киләсәккә революцион ышаныу һәм социализм өсөн көрәшкән большевиктар, эшселәр менән бергә эшләү идеялары сағылған. Ләкин шиғырҙың әһәмиәте быны менән генә сикләнмәй. Ғафуриҙең «Бәхет эҙләү» тигән шиғыры башынан ахырына тиклем атеизм, аллаһыҙлыҡ идеяһы менән һуғарылып яҙылған. Ғафури ул шиғырында кешенең үлгәндән һуң терелеп «йәннәткә» инеүен инкар итә, **йәндең тәндән башҡа йәшәмәүен күрһәтә.** Шуның өсөн ла бәхетте күктән эҙләмәҫкә, бәлки ерҙән эҙләргә кәрәк, тигән фекергә килә.

— Имеш ул шәбһеҙ бер ысын
сәғәдәткә аша үлгәс,
Китә йән ғәрше өлгәгә уның тик был
йәнең күмгәс.
Булырмы унда бер-бер ысын сәғәдәт
инде тикшермәйем,
Ер өҫтөндә торол күк фәлсәфәһенә
барып кермәйем...
. . . . :
— Үлеп мең йыл торорға бер сәғәт
ғүмерем алыштырмайым.
Бәхет эҙләйем ер өҫтөнән, Торам мин бында нишә тормайым, — тине Мәжит Ғафури.

Ғафуриҙең был әҫәрендә шиғри ҡалыпта, әҙәби формаға һалынған төп идеялы ябай телгә әйләндереп әйткәндә, шул килеп сыға: 1) **кешенең йәне уның тәне менән бергә йәшәй. Кеше үлеү менән уның йәне лә үлә, бөтә.** Тимәк, **материя — беренсе башланғыс, рух—икенсе.** Кеше үлгәс уның тәне серел тупраҡҡа әүерелә, йән, рух, фекерләү кеүек нәмәләрҙең әҙе лә ҡалмай, улар бөтәләр; 2) шулай булғас, үлгәндән һуң йәндең «ғәрше — ағләгә» ашыуы, мосолмандың үлгәндән һуң йәннәткә кереп, уның «йылғалары» янында үҫкән ҡуйы япраҡлы ағас төбөнә ҡырын ятып, йәннәт шараптарын эсеп, хөрмәләр ашап, 17-шәр генә йәштә булған матур һәм нескә билле хур ҡыҙҙарын бармаҡ шартлатып, Әппппа ҡайнә бейетеп, ләззәтләнеүҙәре — былар бөтәһе лә ялған әкиәттәр...

Үлгәндән һуң йәшәүҙе, алланы һәм уның йәннәтен инкар иткән Мәжит Ғафури материаль донъяны ярата. «Үлеп мең йыл тороуға бер сәғәт ғүмерем алыштырмайым. **Бәхет эҙләйем** ер өҫтөнән, торам мин бында нишә тормайым, — тип, ысын бәхетте ерҙән эҙләгән Мәжит Ғафури социализм өсөн көрәшкән большевиктарға, эшселәргә килеп ҡушыла.

Мәжит Ғафуриҙең «Бәхет эҙләү» шиғыры Г. Гейненең «Германия» әҫәрен хәтергә төшөрә.

1914 йылда империалистик һуғыш башланды. Был һуғыштың төп сәбәптәрен аңламаған Мәжит Ғафури, уны донъяла үсаллыҡ ҡылған кешеләргә тәңере тарафынан ебәрелгән иҙә, алланың ҙур ҡәһәре, тип аңлай («Фәтрәт заманы» һәм «Ҡиәмәт» шиғырҙары). Мәжит Ғафури тәңеренән «Ал ерендән ғәзраилде... итмәһен беҙҙе һәләк...» тип һорала ла, алла уның был доғаларын ишетмәй. Ғафуриҙең аһ-зарҙарына ҡолаҡ һалмай. Ер йөҙөндә ҡанлы һуғыш көсәйгәндән-көсәйә барҙы. ер йөҙө мәзлүмдарҙың ҡан-йәше менән тулды. Был картиналарҙы күргән Мәжит Ғафури ниһайәт аллаға ҡаршы баш күтәрҙе һәм — «Юҡтырһың да алла» шиғырын яҙҙы.

— Юҡтырһың да алла... Әгәр булһаң,
Сабыр итмәҫ инең был эшкә,
Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаҫ
Инең ерҙә алтын, көмөшкә...
Күрер инең кеһеҙ бәндәләрҙе,
Ярҙам итер инең уларға,
Ирк бирмәҫ инең кеселәргә
Кеһеҙҙәрҙе былай таларға...
Пәш түктермәҫ инең ҡан аралаш
Ишетер инең аһ-зарҙарҙы,
Күп кешеләр эстән һыҙлап йөрөй
Бер ҡыҙғаныр инең уларҙы...

Мәжит Ғафури үҙенең был һүҙҙәре менән алланың юҡлығын иҫбат итте. Ер йөҙөндә булған яуызлыҡтар, төрлө үҫаллыҡтар һәм ҡайғы-хәсрәттәр, төрлө һәләкәттәр алланың йәшәүенә ҡаршы һөйләп торалар. Әгәр ҙә алла булһа, ерҙә хөкөм һөргән капитализм закондарын бөтөрөр ине, пролетариатты һәм крәстиәндәрҙе капиталистарҙан һәм помещиктарҙан таламаҫ ине, ул уларға, йәғни кеһеҙҙәргә, мәзлүмдарға ярҙам итер ине. Ләкин ярҙам итә алмай, капитал закондарын бөтөрә алмай. Быға алланың ҡөҙрәте етмәй. **Тимәк, алла — камил түгел.** Был — алланың сифатына тура килмәй. **Тимәк, алла юҡ.** Мәжит Ғафури дауам итә:

— Яратҡанһың халыҡтарҙы, фәҡәт
Тигеҙ итеп ярата алмаһың,
Ысын мөхәббәт һәм дә шәфҡәт нурын
Тигеҙ итеп тарата алмаһың...
Бәндәләрең булды ысын бәхетһеҙ
Диндәрең дә файҙа бирмәне,
Тәғлиматың ошбу көнгә саҡлы
Сәғәдәтне ирештермәне.
Хаким иттең, рәббем, ер йөҙөнә:
Ҡара кеҫә алтын, көмөштө,
Һинең ғәллүиәтең, ҡөҙрәтең
Ошбу эштәр бер ҙә килешмәй.

Мәжит Ғафури үҙенең был һүҙҙәре менән алланы, уның учениеһын, тәғлиматын һәм динде рәхимһеҙ тәнҡитләне, уларҙы юҡҡа сығарҙы.

Мәжит Ғафури дауам итеп:

— Ярай ҙа һин үҙең бик рәхәттә,
Бәндәләрең ҡан-йәш түгәләр,
Ғүмер буйҙарына михнәт сигеп,
Ғазап эстәрендә үләләр...
Ҡөҙрәтең нам булһа бер фарманың
Етмәҫ инеме һуң тыйырға.
Ысын-ысын татыулыҡты, мөхәббәтте
Мәңге урынлаштырып ҡуйырға... — тип яҙҙы.

Ғафури, әгәр ҙә алланың ҡ[illegible] булһа ине, уның бер приказы е[illegible] булған социаль тигеҙһеҙлектәрҙе, [illegible] ҙәрҙе, ҡан-йәш түгеүҙәрҙе бөтөр[illegible] ләр араһында ысын татыулыҡты [illegible] лаштырып ҡуйыр ине,—ти. Ләки[illegible] ҡөҙрәте нам түгел, алланың тө[illegible] мам эшләнеп бөтмәгән... Алла — [illegible] һеҙ, кеһеҙ. Был — алланың си[illegible] тура килмәй. **Тимәк, алла юҡ.**

М. Ғафури үҙенең шиғырын т[illegible] һүҙҙәр менән бөтәрә:

— Сабыр иткән бәндәләргә [illegible]
Ахирәттә ғәйәт ҙур ҙурып.
Шул вәғәҙәнең бик аҙ тына [illegible]
Донъялыҡта күрһәт, ас [illegible]

Кешеләрҙең үлгәндән һуң [illegible] ахирәттә, йәннәттә йәшәүҙәрен [illegible] кән Ғафури аллаға: һин үҙең [illegible] шәйһен, ә был донъяла [illegible] эшселәр ғүмер буйҙарына [illegible] ғазап эсендә үләләр. Ахирәттә [illegible] вәғәҙә иткән йәннәттәреңдән бер [illegible] генә булһа ла **«донъялыҡта күрһ[illegible]** Ләкин алла быны булдыра алм[illegible] ул — юҡ.

Был шиғырға йомтаҡ яһап [illegible] шул килеп сыға: алла кеһеҙ, [illegible] һәм үҫал. Шуның өсөн дә ул [illegible] донъяһын ҡан-йәш диңгеҙенә т[illegible] Уның диндәре һәм учениеһе [illegible] ялған, хыялый әкиәттәр. **Алла ю[illegible]** тырһың да алла» шиғырына [illegible] логика бына шул.

Быны аңламаған Хәй Хисмәт[illegible] фуриҙе ғәйепләп: «Аллаға ш[illegible] рап ташлауҙан ҡотола алмай» [illegible] ләнең тамыры «шөбһәлә ҡарал[illegible] балки атеизм, дәһрилек, [illegible] идеяларын әҙәби парҙаларҙа [illegible] реүҙә. «Юҡтырһың да алла», [illegible] һәм башҡорт матбуғатында [illegible] ҡыр **аллаһыҙлыҡтың әҙәби** [illegible] тигән һүҙ.

Сәйфи Ҡудаш Ғафуриҙең «Юҡ[illegible] алла» шиғыры тураһында үҙен[illegible] лектәренән бер ваҡиғаны миҫ[illegible] ләгәйне: «1915 йылдың башы[illegible] **Ғәлим шәкерттәре** киҫ менән [illegible]

Алдынғы тәжрибәләр трибунаһы

Ҡартофтан юғары урожай алыу өсөн

Республикабыҙҙа һуңғы 3-4 йыл эсендә картоф ултыртыу майҙаны һәм унан урожай алыуҙың киммәле байтаҡ артты. Колхоздарҙа картоф үҫтереүҙә алдынғы бригадалар 1950 йылда һәр бер гектарҙан 250—300-әр центнер урожай алдылар. Бөрө районы Тельман исемендәге колхозда иптәш Исаев бригадаһы 6 гектар майҙандан 370-әр центнер, Шишмә районы Куйбышев исемендәге колхоз 20 гектарҙан 300-әр центнер, ә Бөрө тәжрибә баҫыуында 420-шәр центнер картоф урожайы алынды. Был факттар картоф урожайлылығын күтәреү өсөн ҙур резервтарҙың булыуы тураһында һөйләйҙәр.

Шул уҡ ваҡытта республикабыҙҙың ҡайһы бер колхозларында был ҡиммәтле культураның урожайын күтәреү өсөн тейешле саралар күрмәйҙәр, гектарынан ни бары 70—100 центнер урожай алыу менән сикләнәләр. Быны уларҙа тик агротехниканың түбән булыуы менән генә аңлатырға мөмкин.

Картоф, ҡуҙаҡлы культураларға ҡарағанда, һыуҙы һәм аҙыҡ матдәләрен күберәк талап итә. Был талаптар картофтың сәскә атыу ваҡытында тағы ла арта төшә.

Юғары урожай мастерҙары картофтың был биологик үҙенсәлектәрен яҡшы аңлайҙар, агротехниканы тулыһынса үтәйҙәр, уны һыу һәм аҙыҡ элементтәре менән тәьмин итәләр.

Алдынғыларҙың тәжрибәләре шуларҙы күрһәтә: картоф ултыртыуға таҙа участка бирелә, тупраҡ яҡшы эшкәртелә. Улар картофты күбеһенсә элек арыш, киндер һәм шәкәр сөгөлдөрө үҫтерелгән майҙандарға ултырталар.

Алдынғылар картоф ултыртыласаҡ участкала тупраҡты әҙерләүгә айырыуса иғтибар бирәләр. Был маҡсатта туңға һөрөлгән ер файҙаланыла, гектарына 45—60 тонна иҫәбенән ашламалар индерелә. Алдағы йылда картоф ултыртыласаҡ майҙан август айында предплужникле һабан менән, 22—25 сантиметр тәрәнлектә туңға һөрөлә. Ҡыш көнө был майҙанда 60—80 сантиметр ҡалынлыҡта ҡар тотола, яҙғы ҡар һыуҙары һеңдерелеп ҡалдырыла.

Алдынғылар шулай уҡ сортлы орлоҡ ҡулланыуға ныҡ иғтибар бирәләр. Күбеһенсә «Лорх» һәм «Народный» сортлы картоф ултыртыла. Бының өсөн 60—80 грамм ауырлығындағы картофтар һайлап алына. Орлоҡ картофы 30—35 көн буйына яровойлаштырыла. Шаран районы «Сөн» колхозының тәжрибәсеһе иптәш Сәләғәтдиндың мәғлүмәттәре буйынса картофты яровойлаштырыу һәр гектарҙан 102 центнер өҫтәмә урожай бирә.

Тупраҡ 7-8 градус йылынғас, картофты ултыртырға мөмкин. Был беҙҙең шарттарҙа 15—20 майҙарға тура килә. Был осорҙо алдынғылар иң яҡшы ваҡыт итеп иҫәпләйҙәр.

Мәскәү өлкәһе колхоздарының бай тәжрибәһе картоф ултыртыуҙа квадратлы-оялы ысулдың эффектлелеге тураһында һөйләйҙәр. Беҙҙең Башҡортостанда, Бөрө тәжрибә баҫыуының мәғлүмәттәренә ҡарағанда, картоф ултыртыуҙа квадрат-оялы ысул урожайлылыҡты 17 процентҡа күтәрә һәм хеҙмәткә байтаҡ экономия яһай. Бына шуға күрә лә, Башҡортостан колхоздары быйыл картоф ултыртыуҙа квадрат-оялы ысулды киң ҡулланыуға әҙерләнәләр.

Байтаҡ МТС-тарҙа хәҙер картоф ултыртҡыс машиналар бар. Уларҙы дөрөҫ файҙаланыу хеҙмәтте еңеләйтереүгә һәм урожайҙы күтәреүгә алып барасаҡ. Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхозда машина менән ултыртылған майҙанда картофтың урожайлылығы 11 процентҡа артҡан. Өфө районы Цюрупа исемендәге совхоздың тәжрибәләре лә ошондай факттарҙы күрһәтте.

Юғары урожай мастерҙарының мәғлүмәттәре буйынса картофты кәметелгән норма менән ултыртҡанда, уның урожайлылығын 20—35 процентҡа кәметә. Быны иҫәпкә алып, алдынғылар һәр бер гектарға 20—24 центнер орлоҡ материалы ҡулланалар, һәм бер гектарға 46 мең төп самаһы картоф ултыртыла.

Колхоздарҙа орлоҡ материалдарының күп булыуы быйыл картоф ултыртыуҙа юғары нормалар ҡулланырға мөмкинлек бирә. Шуға күрә агрономдар колхоз етәкселәренә күтәренке нормаларҙың әһәмиәте тураһында аңлатырға һәм уны һәр ерҙә ҡулланыуға өлгәшергә тейештәр.

Алдынғылар картоф ултыртҡандан һуң, ҡабыҡ рәүешендә, 1—2 тапҡыр тырматыу үткәрәләр. Был тупраҡты сүптән таҙарта, һәм уға һауаға береү юлын яҡшырта, дымды быуландырыуҙан һаҡлай. Шытып сыҡҡандан һуң тырматыу ҡабатлана һәм был эш һабаҡтарҙың оҙонлоғо тырманың рамаһына еткәнгә тиклем 1—2 тапҡыр үткәрелә. Бөрө тәжрибә баҫыуының мәғлүмәттәре буйынса бындай тырматыу гектарына 16—20 центнер өҫтәмә урожай бирә.

Алдынғылар йәй буйына рәт араһындағы тупраҡты 4-5 тапҡыр ат йәки трактор культиваторҙары менән йомшартыу үткәрәләр. Ә төп араларындағы тупраҡты тәпке менән йомшарталар. Әгәр ҙә тупраҡта етерлек дым булһа, алдынғылар картоф төптәрен 2—3 тапҡыр күмәләр. Был эш агротехник сроктарҙа эшләнә. Мәҫәлән, иптәш Исаев был сараны тәүге тапҡыр үҫемлек 16—20 сантиметр бейеклеккә еткәс үткәрә, ә 10—15 көндән икенсе тапҡыр күмә. Сөнки картофты һуңға ҡалып күмеү ыңғай һөҙөмтәләр бирмәй. Шулай уҡ уны ҡоро көндә күмеү ҙә ярамай, ул, киреһенсә, урожайлылыҡты кәметеүгә алып бара.

Юғары урожай мастерҙары ашлама ҡулланғанда, һәр гектарға 40—60 тонна тиреҫ индереү менән генә сикләнмәйҙәр, ә ултыртыу алдынан өҫтәмә рәүештә ояларға серегән тиреҫ йәки минераль ашламалар индерәләр. Бындай өҫтәмә аҙыҡландырыу 2—3 тапҡыр ҡабатлана. Ғафури районы Ғафури исемендәге колхозда иптәш Әхмәтшин бригадаһы һәр бер гектарҙы 7—9 центнер көл менән ашлау һөҙөмтәһендә урожайҙы 11 процентҡа күтәрҙе. Ғөмүмән, алдынғылар картоф сәсеүлеген суперфосфат, калий тоҙо менән йәки һәр гектарына 10—11 центнер урынлағы ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландыралар. Был эш дымлы тупраҡта ҡулланыла.

Беҙ бында картоф үҫтереү буйынса алдынғыларҙың тәжрибәләрен ҡыҫҡаса ғына йомғаҡлаштырҙыҡ. Республиканың төрлө райондарындағы колхоздарҙа беҙҙең тарафтан өйрәнелгән 17 бригаданың картоф үҫтереү тәжрибәләре бына ошоларҙы һөйләй. Был тәжрибәләр агробиология фәне талаптарына ярашлы булып торалар.

А. Әхмәров,

Башҡортостан баҫыусылыҡ тәжрибә станцияһының ғилми сотрудниге.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Кадрҙарға иғтибарһыҙ ҡараш

Эреләтелгән колхоздарҙы ауыл хужалығы специалистәре менән тәьмин итеү артелдәрҙе ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуҙа мөһим һәм яуаплы эш булып тора. Ләкин Ҡандра районында был эшкә серьез иғтибар бирелмәй. Шунлыҡтан да район ауыл хужалығы бүлеге һәм МТС-тар үҙ специалистәренең теоретик белемен һәм эш тәжрибәләрен күтәреү өсөн көрәшмәйҙәр.

Райондағы бөтә агрономдар, тик Теребилова, Таһиров, Зорин, Ғәлимов иптәштәрҙән башҡалары, аҙ белемле. Агрономдар, зооветеринар работниктәр араһында И. Волкотруб, Колокольцева, Исхаков иптәштәр кеүек 2—3 класс белемле специалистәр ҙә бар. Был иптәштәр үҙҙәренең белем кимәлен күтәреү өҫтөндә эшләмәйҙәр, шулай уҡ уларға был эштә ярҙам да күрһәтелмәй. Әлбиттә, бындай «специалистәр» колхоздарға тейешле ярҙамды күрһәтә алмайҙар. Шул сәбәпле быйыл «Победа» колхозында 600 центнерҙан артыҡ, «Өс ҡайын» колхозында — 560, «Көрәш» колхозында — 600, «Ҡыҙыл Октябрь» колхозында 380 центнер сортлы бойҙай орлоҡтарының боҙолоуына юл ҡуйылды. Бындай факттар башҡа колхоздарҙа ла бар.

Районда зооветеринар работниктәрҙең дә күпселеге аҙ белемле. Был малсылыҡты алға ебәреүгә ҡамасаулай. Шунлыҡтан да былтыр малдарҙы дауаламау һөҙөмтәһендә районда байтаҡ мал үлде. Малдарҙы тәрбиәләүҙә һәм һауыҡтырыуҙа бындай етешһеҙлектәр быйыл да ҡабатланалар. Сөнки аҙ белемле специалистәр малдарҙы тәрбиәләүҙә зооветеринария сараларын ойоштора белмәйҙәр. Мәҫәлән, «Игенсе» колхозында ветфельдшер Собханколов, зоотехник Хәйруллин һәм зооветеринар участка мөдире Шәрәфетдинов иптәштәр бар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был колхозда һуңғы ике ай эсендә генә 6 һыйыр, 105 баш һарыҡ, 3 сусҡа үлгән.

Райондағы 3 зооветеринар участкаһың береһендә лә махсус белемле специалистәр юҡ. Быйыл районда зооветеринария буйынса ойошторолған 3 йыллыҡ курсҡа 192 кеше һәм агротехник курсҡа 110 кеше ылыҡтырылһа ла, курстар тейешенсә эшләмәнеләр. Сөнки уларға аҙ белемле специалистәр етәкселек итә.

Районда фән ҡаҙаныштарын, алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалау, уларҙы колхоз производствоһында ҡулланыу эше район етәкселәренең иғтибарынан ситтә тора. Район ауыл хужалығы бүлеге эргәһендә ауыл хужалығы фәндәрен пропагандалау бүлеге ойошторолмаған.

— Кеше табып булмай бит,—ти ВКП(б) райкомының ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Дивеев.

Юғары белемле ауыл хужалығы специалистәре үҙ эштәре буйынса файҙаланылмайҙар. ВКП(б) райкомы был эштә тейешле ярҙам күрһәтмәй. Мәҫәлән, ауыл хужалығы институтын тамамлаған Шаймарданов, Загороднева, Е. Волкотруб иптәштәр мәктәптәрҙә математика, рус теле фәндәрен уҡыталар. Ауыл хужалығы техникумдарын тамамлаған Ситдиков, Сәнәғәтуллин, Талхин, Миңлеғәлина, Әхмәтова иптәштәр төрлө урындарҙа — контораларҙа һәм магазиндарҙа эшләйҙәр. Районда уңдайҙар 20 кешенән артыҡ.

П. Ерсмеев.

Коммунизм төҙөлөштәрендә

3. ДАЛА ГИГАНТЫ

Хәсән Ямалетдиновты бөтә экипаж көттө. Ул гигант экскаваторҙы эшләтеү өсөн бик кәрәк булған майҙы алып ҡайтырға киткәйне. Май булһа экскаватор эшләй, ерҙе умырып алып ситтәге өйөмгә түгә. Тик уның запас майы бик аҙ ҡалғайны. Бөткәнсе ҡайтып өлгөрәрме, юҡмы...

Күҙ-ҡаш көттөләр уны. Экипаж начальнигы Анатолий Усков борсола ла башланы. Машина туҡтар, һәр минут һайын бер вагонлыҡ балсыҡ каналдан алынмайынса ҡалыр. Өҙөкләмәй төн. Таң атҡансы эш бармаҫ...

Ләкин уға оҙаҡ борсоларға тура килмәне. Бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә лә, көндөң насар булыуына ҡарамаҫтан, иптәш Ямалетдинов үҙенең дуҫтарына машина майын алып ҡайтып еткерҙе. Эш туҡталманы, яңы смена тағы ла күтәренкерәк дәрт менән эшләне. Бер смена эсендә биш мең кубометр ер ҡаҙып өйөлдө.

Был «14—65» марҡалы атлаусы ҙур экскаваторҙың боевой экипажы ине. Ул Волга—Дон каналы төҙөүселәренең ғорурлығы. Экипаж члендарының төрлөһө төрлө өлкәләрҙән килгән. Уларҙың бөтәһен дә бер юғары теләк килтергән бында.

Экипаж начальнигы — Анатолий Павлович Усков — Сталинград кешеһе. Ул Бөйөк Ватан һуғышында ла ошо ерҙәрҙә немец-фашист ғәскәрҙәре менән һуғышҡайны. Еңеү көнө еткәс, ул, тыуған ҡалаһына ҡайтып, механика институтын тамамланы. Һәм был йәш инженерҙы гигант экскаваторҙың начальнигы итеп билдәләнеләр. Башҡалар ҙа шулай килде. Бераүҙәре инженерҙар, икенселәре урта-техник белемле. Гигантты йыйғанда механиктарға, конструкторҙарға улар үҙҙәре лә булыштылар. Һәр кем уның эш урынына барып эшләй башлауын ҙур түҙемһеҙлек менән көттө. Анатолий Усков, бөтәһенә ҡарағанда ла, күберәк тулҡынлана ине. Сөнки донъялағы тәүге шундай гигант менән етәкселек итеү уға тапшырылған. Ҙур яуаплылыҡ, күп көс, энергия, тырышлыҡ талап итәлә ине унан. Һәм машина һәр ваҡыт яҡшы эшләне.

Хәсән Ямалетдинов, был коллективҡа башҡаларға ҡарағанда, һуңыраҡ килгәйне. Ул каналдың ошо Водораздел районы янындағы Тундут станцияһында тыуып үҫкән кеше. Тыуған ауылына ҡайтҡас та төҙөлөшкә килде. Ул көндә бер нисә урында атлаусы экскаваторҙар эшләй ине. Уларҙың, зенит орудиеларының стволдары кеүек, бейеккә күтәрелгән стрелалары әле канал яғына, әле ер өйөмө яғына борола, ҙур сүместәре ҡояшта ялтырай. Хәсән әлек тә экскаваторҙар менән таныш ине. Тик бындайҙарҙы күргәне булманы уның. Ә ҙурыһы уларҙың алдараҡ ине.

Ике ҡатлы йорт бейеклек корпусы булған, бөтә стрелалары менән ете ҡатлы йорттан ҡалышмаҫлыҡ гигант эшләй. Экскаваторҙың бынһыһы ла үҙенең 1150 тонна ауырлыҡ көүҙәһе менән, кесерәктәре кеүек, ҙур диаметрлы металлик түңәрәк рама өҫтөндә әйләнә. Бик тиҙ һәм бик еңел хәрәкәт итә. Үҙенең оҙон стрелалы яғы менән каналдың төрөн соҡоро яғына әйләнеп тә өлгөрмәй — ҡорос канатҡа тағылған ҙур сүмесе түбәнерәк төшә башлай һәм, үткер тештәре менән тырнап, үҙ эсенә 14 кубометр ерҙе тултыра. Ҡорос канат уны тағы 50 метр бейеклеккә күтәрә, һәм был гигант, бөтә корпусы менән 180 градусҡа боролоп, ерҙе 130 метр алыҫлыҡтағы бейек өйөмгә түгә.

Хәсән уйнап үҫкән далала ултырған был гигант ҡатмарлы эш башҡара. Эш процесында уның йөҙҙәрсә ҙур һәм бәләкәй механизмдәре ҡатнаша. Электр тогы ҡеүәтле моторҙарҙы әйләндерә, экскаваторҙың махсус магнит станцияларына урынлаштырылған ҡатмарлы автоматика һәм пневматиканы эшләтә. Күтәргес һәм тартҡыс лебедкалар хәрәкәт итә. Әйләндереү механизмдәре гөүләп тора.

Экскаватор минут һайын бер тапҡыр әйләнә ине. Хәсән уның сүмесе артынан күҙен алмайынса байтаҡ ҡына ҡарап торҙо ла, сәғәт һайын бер ҙур составлыҡ ер ҡаҙып сығара икән был, тигән фекергә килде.

— Әйҙә, эскә ин, — тип саҡырҙылар уны.

Тека баҫҡыстар менән улар өҫкә күтәрелделәр. Эскә ингәс Хәсәндең күҙ алдында гиганттың бөтә төҙөлөшө асылды. Уртала ҡорос канаттар уралған ҙур барабандар. Ян-яҡта өсәр насос, төрлө урынға ҡуйылған 48 электр моторы. Экскаваторҙың был машиналар бүлексәһе үҙе лә тигеҙ ритм менән генә шаулай. Ҙур заводтың цехына ла, электр станцияһына ла оҡшаған ине.

Гиганттың управление пульты икенсе ҡаттың алдында уң яҡ мөйөштә ине. Ул трактор кабинкаһынан артыҡ ҙур түгел. Бөтә стенаһы быяла тәҙрәнән тора. Руль урынына ике кескәй рукоятка, автомашиналағы кеүек, ике педаль. Һул яҡта төрлө узелдарҙың дөрөҫ эшләүенә сигнал булып кескәй лампочкалар яна. Креслоға ултырған һары сәсле, ҡыҙғылт йөҙлө таҙа кеше бер үҙе ошо гигант ер ҡаҙыусы менән еңел генә идара итә ине.

Бында инеү, гиганттың эшләүен күреү Ямалетдиновҡа күп яңылыҡтарҙы асты. Өҫтән бөтә нәмә асыҡ күренә. Каналдың төбө тәрән. Сүмес төшөп китә лә, ер тултырып сыға. Ә күршелә «Уралец» экскаваторҙары эшләй. Ул тейәгән балсыҡты үҙе бушатҡыс автомашиналар ситкәрәк ташыйҙар. Ә бульдозер тигеҙләп китә. Алыҫтараҡ тағы бер экскаватор. Унан икенсеһе, өсөнсөһө... Тағы ла әллә нәмәләрҙе күрҙе ул, күпкә өйрәнде. Үҙен дә бик ныҡ үҫкән кеүек һиҙҙе.

— Оһо, ниндәй бейек икән бында! — тине ул һоҡланып.

Һәм Ямалетдинов был гигант — атлаусы ҙур экскаваторҙа эшләй башланы. Эшкә тиҙ өйрәнде ул. Хәҙер инде экипаж начальнигының урынбаҫары. Эшкә өйрәнеү өсөн уға инженер Усков та, группарторг Плеханов һәм смена начальнигы Михаил Митрошин дә ҙур ярҙам күрһәтте.

Митрошиндең үҙен дә экскаватор эшенә шулай өйрәткәйнәр ине. Ул Башҡортостан кешеһе. Стәрлетамаҡ төҙөлөш тресында экскаваторщиктар курсында уҡыған. Уҡытыусыһы Сергей Дмитриевич Белых уны был квалификацияны алырға өйрәтте. Һәм йәш экскаваторщик, унда бер йыл эшләгәс тә, үҙе теләп сталинсе төҙөлөшкә килде. Ул килгәндә атлаусы экскаваторға монтаж яһалырға ғына тора ине. Был эшкә Митрошин дә килеп ҡушылды. Гигант өҫтөндәге 45 мең заклепканың байтағы уның көслө ҡулдары менән ҡуйылған.

Экипаждың һәр члены экскаваторға төрлө ваҡытта эшләй башланы. Ләкин бөтәһе лә үҙҙәренең тәүге сүмес балсыҡ алыуҙарын ҡыҙыҡ итеп тәрән тойғо менән хәтерләйҙәр. Коллектив был гигант менән ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 400 мең кубометрҙан артыҡ ер эшен башҡарҙы. Был тиклем ҙур эште башҡарыу өсөн 33 мең платформа, унар меңдәрсә автомашина, трактор, бик күп кеше кәрәк булыр ине. Ул һәр ваҡыт 8—10 мең эшсе көсөн алыштыра.

...Экскаватор үҙ тирәһенән ерҙе ҡаҙып алып бөткәйне. Уға алғараҡ күсенергә кәрәк булды. Алға ул тәгәрмәстәр менән дә, гусеница ярҙамында ла күсенмәй. Улар был гигантҡа һис тә сыҙамаҫтар ине. Атлау өсөн уның махсус башмаҡтары бар. Кескәй түгелдәр улар. Оҙонлоҡтары 16 метр, киңлектәре ике метр ярымлыҡ, һәр береһе ҡырҡар тонна ауырлыҡтағы был металлик баллондар экскаватор эшләгәндә уның ике яғында күтәрелеп торалар ине. Алға күсенергә кәрәк булғас машинист көслө насостар ярҙамында атлаусы гидравлик механизмдарҙы эшләтә башланы.

Был механизмдар артыҡ ҡатмарлы түгел. Һәр ике яҡ стенаның тышына беркетелгән береһе төп, икенсеһе ярҙамсы цилиндр бар. Уларға яһалған баҫым менән башмаҡтарға беркетелгән поршендар хәрәкәткә килтерелә. Машинист тауҙа экскаваторҙың стрелаһын атлай торған яҡҡа әйләндерҙе һәм ярҙамсы поршендең оҙонайыуы менән ҙур башмаҡтар ике метр алға киттеләр, ә төп поршендарҙың оҙонайыуы уларҙы ергә тейҙерҙе. Бынан һуң экскаваторҙың уртала ергә тейеп торған таяныс рамаһы өҫкә күтәрелде һәм поршендарға баҫым яһалғас та, экскаваторҙың үҙ көүҙәһе алға китте. Шулай итеп, бер башмаҡтар өҫтөнә, бер рамаһына баҫып, был гигант алға атлай. Һәр атлау өсөн уға бер минут ваҡыт етә.

Үҙе өсөн байтаҡ ҡына эш майҙаны ҡалдырып, был дала гиганты яңы урынға туҡталды һәм канал үҙәнен тағы ла киңәйтә башланы. Уның 17 кешелек кескәй экипажы ваҡыттың бер генә минутын да бушҡа үткәрмәй. Сөнки уның алдына ҙур бурыс ҡуйылған. Йыллыҡ заданиеһы ҙур. Яңынан 350 мең кубометр ер ҡаҙыйһы бар. Уны ла был коллектив канал төҙөүселәре араһында беренсе булып Бөйөк Октябрҙең 34 йыллығы көнөнә тамамларға йөкләмә алды. Уларҙың вәғәҙәһендә тростарҙың эшләү срогын 25 процентҡа оҙайтыу, майлау материалдарына 15 процент экономия яһау тураһында ла әйтелгән.

Социалистик ярыш экипаждың уңышын үҫтергәндән-үҫтерә, мастерлыҡтарын арттыра. Хәҙер С. Плеханов, М. Митрошин иптәштәрҙең сменалары гүзәл эш һөҙөмтәләре бирәләр. Өлкән мастерҙарҙан Д. Слепуха, М. Коряков иптәштәр алдынғы стахановсылар. Ә Усков һәм Ямалетдинов иптәштәр экипаждың хеҙмәтен ойоштороу, эш шарттары тыуҙырыу өсөн үҙҙәренең бөтә көстәрен, осталыҡтарын арнайҙар.

Һәр көн был экипажға яңы уңыштар килтерә. Уның члендары сталинсе эпоханың бөйөк төҙөлөшө булған Волга—Дон каналын төҙөүҙең срогын ҡыҫҡартыу өсөн, бөтә төҙөүселәр кеүек, фиҙакәр хеҙмәт итәләр. Ә дала гиганты, үҙ бурысын ныҡ киткес оҫта үтәп, ышаныслы аҙымдар менән туп-тура еңеүгә атлай.

Ғ. Ибраһимов,
(махсус хәбәрсебеҙ).

Сталинград ҡалаһы.

яһанылар. Һәр кем үҙенең белгәнен, әҙәби хикәйәһен сығып һөйләне. Шәкерттәр Мәжит Ғафуриҙан үҙенең берәр яңы шиғырын уҡыуын һоранылар. Шунан һуң шағир трибуна алдына сығып «Юҡтырһың да алла» шиғырын уҡыны. Ғафуриҙың был шиғыры Ғалиә шәкерттәренә, хәлфәләргә, ишетелмәләргә шундай көслө тәьҫир итте, әйтерһең, бомба шартланы. Бөтә мәҙрәсә гөж килә башланы». Ғалиә мәҙрәсәһендә бомба шартлау тәьҫирен биргән «Юҡтырһың да алла» мосолмандарҙың динле назаратына ла ныҡ тәьҫир иткән. «Юҡтырһың да алла» шиғыры баҫылып сыҡҡас, руханиҙар, муллалар Мәжит Ғафуриҙы аллаһыҙлыҡта ғәйепләп һөйләнеләр, тәкрәктәрен сәсеп һүгенделәр. Ҡазан мәсеттәрендә бәддоға ҡылдылар һәм «Дин вә мәғишәт» журналында Ғафуриҙы аллаһыҙ тип иғлан иткәнләр.

Бына шулай итеп, Мәжит Ғафури ислам идеологияһының хөкөм һөрөүенә һәм ҡаты цензура режиме булыуға ҡарамаҫтан, аллаға «ялланыу» формаһында булһа ла, аллаһыҙлыҡ идеяһын поэзия пәрҙәһе аҫтынан йәшереп, уҡыусыларға тәҡдим итте.

М. Ғафуриҙың «Юҡтырһың да алла» шиғыры үҙенең алланы инкар итеү идеяһы һәм формаһы яғынан боронғо Греция материалистарының алланы тәнҡит итеүҙәрен хәтерләтә. Греция материалистары донъяла уҫаллыҡтың һәм һәләкәттәрҙең булыуы, алланың йәшәүенә ҡаршы һөйләй, тип иҫбат иткәндәр. Был положение материалист Эпикурҙың түбәндәге һүҙҙәрендә кәүҙәләнгән:

— ... Алла йәки донъянан уҫаллыҡты алып ташларға теләй, ләкин булдыра алмай, йәки булдыра ала, ләкин теләмәй, йәки булдыра ала һәм теләй. Әгәр ҙә ул теләй, ләкин булдыра алмай, тиһәң, был — алла ҡөҙрәтле түгел, тигән һүҙ була. Был көсһеҙлек алланың тәбиғәтенә тура килмәй. Әгәр ҙә ул булдыра ала, ләкин теләмәй, тиһәк, был — алланың уҫал ихтыярлы булыуын күрһәтә. Был да алланың тәбиғәтенә тура килмәй. Әгәр ҙә ул теләй һәм булдыра ала тиһәк, был— алланың тәбиғәтенә тура килә, ул ваҡытта ни өсөн һуң ерҙә уҫаллыҡ йәшәй,— ти Эпикур. Бына шулай итеп, материалист Эпикур алланың ҡөҙрәтһеҙ, көсһеҙлеген һәм уның уҫал ихтыяры булыуын иҫбат итеп алланы юҡҡа сығара, уны инкар итә. Карл Маркс һәм Ф. Энгельс үҙҙәренең «Немец идеологияһы» тигән әҫәрендә Эпикурға ҙур баһа биргәндәр. «Эпикур ...Боронғо замандың ысын радикаль аң-белем таратыусыһы, ул боронғо дингә асыҡ һөжүм иткән, һәм уларҙан римлеләр атеизме таралған...» тип яҙғандар. Шуның өсөн дә материалистик шағир Кар Лукреций үҙенең «Нәмәләрҙең тәбиғәте тураһында» тигән данлыҡлы әҫәрендә Эпикурҙы кешелекте дин ҡыҫыуынан азат итеүе өсөн маҡтап йырлаған.

Беҙҙең Мәжит Ғафури ҙа татар һәм башҡорт матбуғатында иң беренсе тапҡыр атеизм, аллаһыҙлыҡ идеяларын поэзияла кәүҙәләндерҙе.

Реаль тормошто өйрәнеү, капитализм донъяһындағы ҡатлаулы күренештәрҙе тикшереү, аллалар, фәрештәләр, йәннәттәрҙе бер ситкә ташлап, ерҙә йәшәгән кешеләрҙең тормош хәлдәре менән яҡындан танышыу арҡаһында һәм большевиктар идеологияһының, Ленин—Сталин партияһы лозунгыларының тәьҫирендә Мәжит Ғафури диндән алыҫлашҡан һайын алыҫлаша бара һәм аллаға ҡурҡыуһыҙ һөжүм итә. Әгәр ҙә элек Мәжит Ғафури империалистик һуғышты донъяла уҫаллыҡ ҡылған кешеләргә тәңре тарафынан ебәрелгән яза тип аңлаған булһа, 1915 йылда яҙылған **«Кем ул»** шиғырында инде бөтөнләй башҡаса ҡарай.

Империалистар тарафынан алданып, һуғышҡа ебәрелгән миллиондарса һалдаттарҙың һис бер файҙаһыҙ ҡан түгеүҙәрен күргән Мәжит Ғафури **ҡоралдарҙы байҙарға ҡаршы юнәлдерергә ҡарап,** тигән идеяны бирә. Һалдаттарға: һеҙ «эштең асылын аңлай алмайһығыҙ. **Байҙар һеҙҙең иркегеҙҙе тартып алғандар ҙа бер-берегеҙҙе үлтерергә ҡушҡандар»,** ти. Былай бер-берегеҙҙе үлтереп, донъя иркен ҡалмаҫ. Шуның өсөн дә: — һин шулай ҡоллоҡта йөрөһәң, донъя киң булмаҫ һиңә, бәрсә эштәрҙән **элек баш бул туған үҙ иреңдә,** тип империализм һуғышын граждандар һуғышына әүерелдерергә саҡыра. Шул уҡ 1915 йылда яҙылған бер шиғри парсаһында Мәжит Ғафури ер йөҙөн «Хоҙайҙың төрмәһе» тип ҡарай, 1916 йылда яҙылған «Көс» шиғырында Мәжит Ғафури капиталды «ер йөҙөндә хоҙай» ти.

— Әй «ҡара көс» һин кешелек
Донъяһынан кәлмә һин...

Бер ваҡытта пыр туҙырһың,
Әйләнерһең келгә һин... тип капитализмдең һәләк булыу менән бөтәүен күрһәтте. Был һәләкәтте тиҙләтер өсөн һәм халыҡтарҙы тиҙерәк азат итер өсөн Ғафури «Бөтһөн империализм һуғышы!» тип политик лозунг ташланы.

— Ундағы беҙҙең туғандар туп ата бер-берәүһенә

— Ул туғандарҙың ҡулын сисәйек, улар булһын азат,

Ҡысҡырайыҡ беҙ бер юлы: «бөтһөн һуғыш!..», «бөтһөн йыһан!» тине.

Бына шулай Мәжит Ғафури аллаларҙы һәм диндәрҙе сүплеккә ташлап, большевиктарҙың политик лозунгыларын әҙәби ҡалыптарға һалып кәүҙәләндерә, материализм нигеҙенә аяҡ баҫа.

1917 йылдағы февраль революцияһы тәрәнәйә башлағас, эске һәм тышҡы контрреволюция генерал Корнилов ҡулы менән революцияны бөтөрергә уйланы. Корнилов заговорын бөтөрөү өсөн большевиктар кәрәк булған бөтә сараларҙы күрҙеләр, революция көстәрен туплынылар, халыҡтарҙы көрәшкә саҡырҙылар. Беҙҙең Мәжит Ғафури партияның тауышын ишетеп, үҙенең «Аждаһа» тигән шиғыры менән көрәш майҙанына сыҡты. Халыҡтарҙың бәхете һәм ысын азатлығы өсөн дошманды рәхимһеҙ үлтерергә кәрәк, тип яҙҙы шағир.

— Мәңгегә үлтерелһен ул ҙур «Аждаһа»,
Баш күтәрмәҫлек булып был донъяға,
Ысын хаҡыҡатҡа бирелһен ысын баһа,
тине.

Шағирҙең февраль революцияһынан Октябрь революцияһына күсеүҙә «Аждаһа» шиғыры трамплин ролен уйнаны. «Аждаһа» шиғыры Мәжит Ғафуриҙың политик философия кредоһы булып тора.

Бөйөк Октябрь революцияһын Мәжит Ғафури сикһеҙ ҙур шатлыҡ менән тәбрик итеп ҡаршы алды һәм үҙе үлгәнгә тиклем социализм төҙөүселәр менән бер сафта барҙы.

* * *

Мәжит Ғафуриҙың бөтә шиғырҙары һәм әҫәрҙәре тиерлек политик идея менән һуғарылып яҙылғандар һәм үҙҙәренең тенденциялары менән киләсәккә ҡарағандар. Мәҫәлән:

— Был дәүләт мәңге тормаҫ, бер көн бөтәр,
Шул көндә ихтыярың ҡулдан китер,
Бәхет дәүләт бер сәбәпле ҡулдан китһә,
Солтандар балыҡсыға хеҙмәт итер.
(«Йәш ғүмер» — 1903)

Тимәк, байҙарҙың байлығы мәңге нәмә түгел, ул бер көн бөтәсәк. Ана шул саҡ бай әфәнде эшселәргә хеҙмәт итәсәк. Октябрь революцияһы байҙарҙың байлығын тартып алып халыҡҡа бирҙе. Революция булғас ярлыланып ҡалған, абыйын хәсрәт эсендә янған «Бай абзый» тураһында:

— Өллә аҡтар бик алыҫлашҡанға хәсрәт артамы...
Өллә күңелең бик алыҫтарға — Себергә тартамы...
— Тыңламайҙармы өллә әйткән һүҙҙәреңде эшселәр,
Ниндәй эш ҡушһаң эште шул минутта эшләүселәр.
Ниңә һиңә буйһонмайҙар һуң? Ниңә ҙурайғандар улар...
Ниңә уларҙы ут менән ҡурҡытмайҙар һуң муллалар,
Ялуарып бағ бер хоҙайға, ул һине күрмәҫме икән.
Шул **доғаң** менән һинең аҡтар кире килмәҫме икән? — тип яҙҙы.

Мәжит Ғафури байҙарҙан, уларҙың экономик файҙаларына хеҙмәт иткән ерәм тамаҡ — паразит муллаларҙан, диндән һәм алланан ҡысҡырып көлә, уларҙың кәсһеҙлеген, уларҙың юҡлығын аңлатты.

Советтар осоронда яҙылған шиғырҙарының күбеһе тиерлек аллаһыҙлыҡ идеялары менән һуғарылып яҙылғандар. Мәҫәлән, 1920 йылдың октябрь айында яҙылған «Яңы байрам» шиғырында Мәжит Ғафури **христиан, йәһүд һәм ислам** диндәрен тәнҡитләне, уларҙың бөтәсәктәрен күрһәтте.

— Мәнсүх булыр иҫке диндәр,
Иҫке тәүрат, иҫке доғалар,
Күҙҙән төшәр хәҙер бөтәнләйгә
Иҫке байрам, иҫке йолалар...
Күрмәйһегеҙме, төрлө милләттәрҙең
Изге, яңы юлға ингәнен... тине.

Октябрь революцияһы булғас кешелек донъяһында яңы эра башланғанда, төрлө милләт халыҡтарының пролетар интернационализм юлына аяҡ баҫыуҙарын аҡшы аңлаған М. Ғафури диндәр бөтөрҙәр, тине. «Ҡыҙыл таҡтаға» шиғырында байҙарҙың, батшаларҙың, руханиҙарҙың:

— Яҙылып биҙәкләнгән «ләүхелмәхфүз»
Таҡтаһын емереп ватабыҙ.
Мең йылдарса миллиард халыҡтарҙың
Йөҙөн һөрткән «ҡара таш»тарын,
. . . .
Алтын, көмөш, ынйы-мәрйән менән
Биҙәкләнгән төрө бағтарын
Урынынан алып ватабыҙ ҙа,
Асыу менән ергә атабыҙ, — тине.

«РЛКСМ» тигән шиғырында йәннәттәрҙе, алланы һәм төрлө паразиттарҙы фаш итеп «Улар беҙгә бер тингә лә ҡарамай» тине. Яңы тормош — коммунизм төҙөүсе миллиондарса комсомол ғәскәрҙәренең
«донъя тетрәтеп,
Ерҙе нурлатып, тормош үҙгәртеп,
— Капитал донъяһын, аттай олатып
Серек диндәрҙең мәғбәсен ватып, киләүен кәүҙәләндерә, иҫке тормошто **үҙгәртеп** коммунизм төҙөүселәрҙе маҡтап йырлай.

М. Ғафури үҙенең 1905 йылға тиклем яҙылған шиғырында төрөктәрҙең, ғәрәптәрҙең, Ҡытай һәм Һиндостан халыҡтарының артта ҡалыуҙарына, уларҙың империалистар тарафынан йәберләнеүҙәренә **идеализм** күҙлегенән ҡараған булһа, **Советтар** осоронда яҙылған шиғырҙарында уларға бөтөнләй башҡаса, **материализм һәм пролетар интернационализмы** күҙлегенән ҡарай.

— Әйҙә йырлайыҡ, мәҙлүм милләттәрҙең
Көслөләрҙән күргән хурлығын.
Сәсәйек ер йөҙөндә ысын азатлыҡ,
Ысын туғанлыҡ, дуҫлыҡ орлоғон...
— Кемдәр хурлыҡ күргән, кемдәр иҙелгән,
Шулар **беҙҙең сафҡа теҙелер.**
Үлгән илдәр яңынан терелер,
Ҡоллоҡ сынйырҙары өҙөлөр, тине.
(«Беренсе Май» — 1922)

Материализм нигеҙенә баҫып, алға, киләсәккә ҡарап революцион уйлаған Мәжит Ғафуриҙың «пәйғәмбәрлеге» халыҡтарҙың азатлыҡ өсөн революцион көрәштәре менән раҫланды. 1917 йылда Октябрь революцияһы тарафынан империализм үҙәктәренә һәм колонияларға сәселгән орлоҡтар бай урожай бирҙеләр. Сөнки бөтә донъя пролетариатының даһиҙары Ленин һәм Сталин «донъя мазлумдарын бергә йыйнап, хаҡиҡәтте яҡлап», сикһеҙ ҙур көрәш алып барҙылар. Ана шуның һөҙөмтәһендә бөгөн, ер йөҙөндә йәшәгән халыҡтарҙың яртыһы тип әйтерлек, 800 миллион кеше капитал иҙеүенән азат булды. М. Ғафури «Матәм яһтары» тигән шиғырында Лениндең даһи шәкертә һәм бөгөнгө көндәң Ленине булған бөйөк Сталинға ҙур өмөт менән ҡарап:

— **Оҙам үтмәҫ, булыр бөтә донъя**
Көслө шөһрәттәрең ҡулында, — тине.

* * *

Бөтә донъяның аҫтын-өҫкә килтереп шаулап үткән көслө дауыл кеүек, Рәсәйлә булған революциялар Мәжит Ғафуриҙа тарих процестың законын аңлауға һәм ленинизмды ҡабул итеүгә килтерҙе. Был — Ғафуриҙың 30 йыллыҡ ижадының төп йомғағы тигән һүҙ.

Х. Наумов,

ВКП(б)-ның Стәрлетамаҡ ҡала комитеты лекторы.

ЯҢАУЫЛ РАЙОНЫНДА

Малсылыҡ фермаларын механизациялаштырыу

Районыҡ күп кенә колхоздарында малсылыҡ фермаларын механизациялаштырыу башланды. Эрәләтелгән «Коммунар» колхозында был эш тамамланды инде. Хәҙер бында малдарҙы эсереү, һыйыр һауыу, һарыҡ йөнөн ҡырҡыу һәм башҡа ошондай эштәр электр көсө менән башҡарыла. «Союз» һәм Чкалов исемендәге колхоздарҙа ла малсылыҡ фермаларын механизациялаштырыу эше бара.

Колхозда радиоузел төҙелде

«Правда» колхозы члендәре быйыл үҙ көстәре менән радиоузел төҙеп, уны эксплуатацияға тапшырҙылар. Бөтә колхозсыларҙың өйөнә радио индерелде. Алдынғы колхозсылар радио аша үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар, художестволы үҙ эшмәкәрлек түңәрәге концерт номерҙәре менән сығыш яһай.

Мәктәп өсөн киноустановка алынды

Ямады урта мәктәп дирекцияһы уҡыусыларҙы хеҙмәтләндереү өсөн киноустановка һатып алды. Хәҙер уҡыусыларға һәр 3 көн һайын фәнни кинокартиналар күрһәтелә.

Ошо көндәрҙә «Зоопаркта», «Урмандә», «Диңгеҙ төпмөшө» картиналары күрһәтелде. Уҡыусылар был картиналарҙы бик ҡыҙыҡһынып ҡаранылар.

Ф. Ғаянов.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Маҡар районы Байғужа ете йыллыҡ мәктәбендә башҡорт халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриға арналған әҙәби кисә үҙғарылды. Кисәлә Мәжит Ғафуриҙең тормош юлы һәм ижады тураһында доклад тыңланды.

Әҙәбиәт түңәрәге члендәре М. Ғафуриҙең «Ҡара йөҙҙәр» повесе буйынса Ғ. Әмири һәм В. Ғәлимов иптәштәр эшләнешендәге «Ҡара йөҙҙәр» пьесаһының инсценировкаһын ҡуйҙылар һәм шағирҙең шиғырҙарын уҡынылар.

* * *

Саймағош. Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһы яҙғы сәсеү осоронда колхозсылар араһында массовый аңлатыу эштәрен яҡшы ойоштороҙо. Бригадаларға беркетелгән агитаторҙар колхозсылар араһында газеталар һәм төрлө художестволы китаптар уҡыйҙар. Колхозсылар өсөн һәр аҙна һайын кисәләр ойоштоола һәм унда төрлө темаларға лекциялар уҡыла.

Ф. Исхаҡов.

* * *

Өфө районы Каганович исемендәге колхоздың мәктәп балалары ағас ултыртыуҙа колхозға ҙур ярҙам иттеләр. Улар баҫыу һаҡлаусы урман полосалары буласаҡ урынға 1500 төп ҡайын, 350 төп ҡурай еләге, 150 төп ҡарағат ағастары ултырттылар.

Райондың Поматау 7 йыллыҡ мәктәбе уҡыусылары үҙҙәренең мәктәп баҡсаһында 500 төп юкә, 300 төп саған, 1500 төп ҡурай еләге һәм һары акация ағастары ултырттылар. Бер нисә йылдан һуң мәктәптең үҙ баҡсаһы буласаҡ.

Ә. Әхтәмов.

* * *

Ит-сөтсыҡсылыҡ тресының Туймазы совхозы трактор бригадалары пар һөрөүгә, былтырғыға ҡарағанда, иртәрәк башланылар. Совхоз таҙа пар һөрөү планын 92 процентҡа үтәне лә инде. Эш сифаты яҡшы.

Б. Кочетков.

Черниковск ҡалаһының «Ударник» клубы эргәһендә үҙ эшмәкәрлек драма түңәрәге (етәксеһе иптәш Баратов) ҙур ғына әҫәрҙәр өҫтөндә эшләй. Ул күптән түгел генә драматург А. Корнейчуктың «Балан әрәмәлеге» тигән пьесаһын әҙерләп, сәхнәгә ҡуйҙы.

Һүрәттә: Ошо пьесанан бер күренеш, драма түңәрәге члендәренән В. Канашина — ауыл Советы председателе Ковшик, А. Соколов — колхоз председателе Романюк ролдәрен башҡаралар.

Ғ. Шәмшиев фотоһы.

Умартасылар

Нуриман районы Иҫке Исай ауылы юкә урмандары эсендә ултыра. Был ауылдағы Ворошилов исемендәге колхоз урман байлығын бал ҡорттары өсөн уңышлы файҙалана.

Хәҙер колхоздың дүрт урында умарталығы һәм уларҙа күсле 400 баш умартаһы бар. Был эштә коммунист Нуғмәхмәт Заһидуллин, 70 йәшлек Заһидулла Фәтҡуллин һәм башҡа иптәштәр намыҫлы хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр.

Бында умартасылыҡ эше колхоз ойошторолған йылдарҙан бирле алып барыла. Колхоз ойошторолған осорҙа фермала 30 баш умарта бар ине. 1939—1940 йылдарҙа ул 440 башҡа етте. Колхоз был өлкәләге уңыштары өсөн 1939 йылда Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашты, күргәҙмәнең беренсе дәрәжәле дипломын һәм мотоцикл алыуға өлгәште, колхоз умартасыларынан Н. Заһидуллин һәм З. Фәтҡуллин иптәштәр көмөш медалдәр менән наградланды.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда умарталыҡта күстәр ныҡ кәмене. 1945 йылға ни бары 120 баш умарта ҡалғайны. Ләкин колхоз председателе иптәш Фәттәхов колхоз умартасылығын аяҡҡа баҫтырыу өсөн бөтә сараларҙы күрҙе. Һөҙөмтәлә күсле умарталар һаны йылдан-йыл артты. Хәҙер колхоздың умарталар һаны, һуғыш ваҡытындағыға сағыштырғанда, 330 процентҡа үҫте.

Умартасылыҡта бөтәһе 9 кеше эшләй. Заһидулла Фәтҡуллин етәкселек иткән умартасылыҡта тоҡомло бал ҡорттары үрсетелә. Бында фән һәм алдынғы тәжрибәләр нигеҙендә һынауҙар үткәрелә. Үҙ колхозы өсөн тоҡомло күстәр етештереү менән бергә, ул һатыу өсөн дә үрсетелә. Колхоз 1950 йылда Чкалов өлкәһе колхоздарына күсле 50 баш умарта һатты. Ҡалған өс умарталыҡтағы бал ҡорттары бал һәм балауыҙ йыйнау өсөн билдәләнгән. Бында 1950 йылда, һауа шарттарының уңайһыҙ килеүенә ҡарамаҫтан, бал һәм балауыҙҙан юғары урожай алынды. 300 баш умартаның һәр береһенән алынған бал 45-әр килограмм, балауыҙ 1,6 килограмм тәшкил итте.

Умартасылыҡ эше фәнни нигеҙҙә алып барыла. 1949 йылда ике корпуслы таҡта умарталар булдырылды һәм уларҙың һәр береһенән 96-шар килограмм бал алынды. Шулай итеп, ябай таҡта умарталарға ҡарағанда, ике корпуслы умарталарҙан 13-әр килограмм бал артыҡ алынған булып сыҡты.

Былтыр бал һәм балауыҙ алыу планын арттырып үтәгәндәре өсөн умартасыларға хеҙмәт көндәренә өҫтәмә түләү тәртибендә 37 центнер бал бирелде. Колхозсыларҙың хеҙмәт көндәренә лә күп бал бүленде. Һуңғы йылдарҙа колхоз бал һәм балауыҙ һатыуҙан ғына ла 30 мең 768 һум аҡсалата доход алды. Был аҡсаға колхоз правлениеһе бинаһы һалынды, мастерской, гараж һәм башҡалар төҙөлдө.

Ворошилов исемендәге колхоз умартасылыҡ эше буйынса хәҙер Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә ҡатнашыуға кандидат булып тора. Был колхоздың председателе иптәш Фәттәхов быйыл март айында Мәскәүҙә умартасылыҡ алдынғылары кәңәшмәһендә ҡатнашты һәм эш тәжрибәләре менән уртаҡлашты.

Шәмсун Типиев.

Кер йыуыу машинаһын эшләү үҙләштерелде

Бәләбәй машиналар төҙөү заводы коллективе хужалыҡта ҡулланыла торған төрлө машиналар төҙөү буйынса күп кенә заказдар үтәй. 1 апрелгә тиклем коллектив алдына кер йыуыу машинаһы эшләүҙе үҙләштереү бурысы ҡуйылғайны. Ул уңышлы үтәлде. Коллектив март айының һуңғы көндәрендә генә өс дана кер йыуыу машинаһы эшләп сығарҙы. Был машина, сәғәтенә 50 килограмм кер йыуып, йорт хозяйкаларының эшен бик күп еңеләйтә. Йыл аҙағына тиклем завод коллективе үҙ алдына 120 машина эшләп сығарыу һәм йыуылған керҙәрҙе киптереү машинаһын эшләүҙе үҙләштереү бурысын ҡуйҙы.

Хәҙер был бурысты уңышлы үтәү өсөн бөтә цехтарҙа ла эшселәр, инженер-техник работниктәр үҙ-ара ярышып эшләйҙәр. Механика цехы ярышта алдынғылар сафында бара. Уның стахановсыһы слесарь иптәш Журбенконың хеҙмәте социалистик ярышта күренекле урын тота. Ул үҙенең станогын социалистик һаҡлыҡҡа алды. Һөҙөмтәлә уның станогы һәр ваҡыт таҙа, техник яҡтан төҙөк була. Иптәш Журбенкоға был деталдәрҙе юғары сифатлы һәм тиҙ үтәүгә ярҙам итә. Шуға күрә ул смена һайын 4-әр норма бирә.

Ғ. Ғәйнетдинов.

Венала йәштәрҙең „50 мең кеше ҡатнашлығындағы слетының" тамамланыуы

ВЕНА, 14 май. (ТАСС). Венала Австрия йәштәренең тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн көрәшенә арналған «50 мең кеше ҡатнашлығындағы слет» 14 майҙа үҙенең эшен тамамланы.

Слеттың тамамланыуы Вена стадионында ҙур спорт байрамы менән билдәләнелде. Стадиондың 60 мең самаһы кешене һыйҙырышлы трибуналары слетта ҡатнашыусылар һәм Австрия башҡалаһының күп һандағы предприятиеләренең делегациялары менән тулды.

Байрам барышында еңел атлетика буйынса ярыштар һәм велосипедта уҙышыу үткәрелде, унда Австрия, Чехословакия, Венгрия, Румыния һәм Польша спортсмендәре ҡатнашты. Шулай уҡ Австрия һәм Венгрияның йәштәр командалары араһында футбол матчы булды. Ул 1:0 иҫәбе менән Венгрия йәштәренең еңеүе менән тамамланды.

Совет делегацияһының етәксеһе Шелепин, Австрия коммунистәр партияһының председателе Коплениг һәм демократик йәштәрҙең Бөтә Донъя федерацияһының генеральный секретаре Жак Дени ҡотлау телмәрҙәре менән сығыш яһаны.

ВЛКСМ Үҙәк Комитетының секретаре Шелепин күп миллионлаған совет йәштәре исеменән слетта ҡатнашыусыларға ҡайнар сәләм тапшырып, былай тип белдерҙе: «Тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн «50 мең кеше ҡатнашлығындағы слет» бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн миллионлаған көрәшселәр менән Австрия йәштәренең бер сафта тороуын тағы ла бер тапҡыр күрһәтте. «50 мең кеше ҡатнашлығындағы слет» бөтә донъяла тыныслыҡты нығытыу өсөн көрәш эшенә Австрия йәштәренең ҙур вкладың булып тора».

Совет йәштәре менән Австрия йәштәре араһында дуҫлыҡ хөрмәтенә, тыныслыҡ өсөн бөйөк көрәшсе һәм йәштәрҙең дуҫы иптәш Сталин хөрмәтенә ҡотлау иғлан иткән Шелепиндең һуңғы һүҙҙәре ҡатнашыусыларҙың көслө овацияһы менән ҡаршыланды.

Австрия коммунистәр партияһының председателе Иоганн Копленинг ҡыҫҡаса телмәрендә, слет Австрия йәштәренең тыныслыҡ һәм үҙ тыуған иленең иң яҡшы киләсәге өсөн көрәш эшенә бөтә көстәрен бирергә әҙер тороуын асыҡ күрһәтеү булып тора, тип билдәләне. «Америка империалистәре, — тине Копленинг, — СССР-ға һәм халыҡ демократияһы илдәренә ҡаршы һуғышыу өсөн Австрияны бер ваҡытта ла плацдармға әйләндерә алмаҫтар һәм Австрия йәштәрен социализм иленә ҡаршы һуғышырға мәжбүр итә алмаҫтар».

Демократик йәштәрҙең Бөтә Донъя федерацияһының генеральный секретаре Жак Дени Австрияның демократик йәштәр ойошмаларын нығытырға һәм киңәйтергә, уларға йәштәрҙең киң ҡатламдарын, шулай уҡ социалистик һәм католик йәштәр ойошмаларының члендәрен йәлеп итергә саҡырҙы.

Иоганн Копленинг «Азат Австрия йәштәренең» иң яҡшы ун район ойошмаһына почетлы байраҡтар тапшырҙы. Слетта ҡатнашыусылар тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн көрәш эшенә, демократик Австрия, Австрия халҡының бәхетле киләсәге өсөн көрәш эшенә бөтә көстәрен бирергә ант иттеләр.

Һуңынан Игорь Моисеев етәкселегендә ССР Союзы халыҡ бейеүҙәре, Государство ансамбленең концерте булды, ул ҙур уңыш менән үтте.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 14 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары әҙерлек кәңәшмәһенең 14 майҙа СССР вәкиле А. Громыко председателлегендә 51-се ултырышы булды.

Хатта ҡайһы бер буржуаз газеталар ҙа совет делегацияһының 10 майҙа индергән тәҡдимдәренең көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү өсөн яҡшы база булып тороуын танымай ҡала алманылар. СССР делегацияһы ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуға ҡағылған положениене ике формулировкала — совет редакцияһында һәм өс делегация редакцияһында, килешелмәгән пункт итеп министрҙәр Советына тапшырырға әҙер тороуын белдерҙе. СССР делегацияһы шулай уҡ Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы пунктты, гәрсә был мәсьәләне тикшереүгә ҙур әһәмиәт бирһә лә, килешелмәгән пункт итеп министрҙәр Советына тапшырырға әҙер. Әлбиттә, СССР делегацияһы әлеккесә Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләгә көн тәртибендә тыныслыҡты тәьмин итеүҙең был мөһим проблемаһының әһәмиәтенә ярашлы булған урындың бирелеүен, йәғни уның көн тәртибенең беренсе пунктында ҡоралланыуҙарға ҡағылған мәсьәлә алдынан ҡуйылыуын талап итә.

СССР делегацияһының көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеү теләге менән ҡуйылған был тәҡдимдәренә көнбайыш державалар вәкилдәре нәмә менән яуап бирҙеләр һуң.

Өс делегация Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы пунктты көн тәртибенән хатта килешелмәгән өлөшөнә лә индереүҙән баш тартыу менән яуап бирҙеләр.

14 майҙағы ултырышта АҠШ, Великобритания һәм Франция делегациялары кәңәшмә алдында торған бурыстарҙы уңышлы үтәүгә ҡамасаулыҡ итеүсе үҙ позицияларын ныҡышып яҡлауҙы дауам иттерҙеләр.

Беренсе булып сығыш яһаған АҠШ вәкиле Джессеп, үҙ позицияһын ... бер ниндәй ҙә дәлилдәр килтермәйенсә һәм шул уҡ ваҡытта унан баш тартыу теләмәйенсә, ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды көстәрҙе ҡыҫҡартыуға ҡағылған пункт буйынса һәм Германияны демилитаризациялау тураһындағы пункттың көн тәртибендәге урыны хаҡындағы мәсьәлә буйынса урынбаҫарҙар килешеүгә килгәнләр, тип «билдәләү менән сикләнергә» тәҡдим итте. Джессеп шулай уҡ Атлантик пакт һәм төрлө илдәрҙә Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне ... лә бөтөнләйгә ситләтеп үтелеүен талап итте.

Франция вәкиле Пароди Джессепты ҡеүәтләп сығыш яһаны.

Унан һуң СССР вәкиле А. Громыко сығыш яһаны. Көн тәртибенең өс делегация тәҡдим иткән бөтә өс вариантына ҡарата СССР делегацияһының позицияһы етерлек тиклем асыҡ әйтелгәйне инде, тип билдәләп, Громыко былай тине:

Беҙҙең төп иғтибарыбыҙ совет делегацияһының һуңғы тәҡдименә бирелергә тейеш. Ул беҙҙең арала килешелмәгән мәсьәләне лә — дүрт державаның ҡоралланыуҙарын һәм ҡоралды көстәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы һәм Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләләрҙе министрҙәр Советы ҡарамағына тапшырылыуына тора.

Унан һуң һүҙ алған Великобритания вәкиле Дэвис, бөгөнгө ултырышта көнбайыш державалар вәкилдәре үҙҙәренең сығыштарында дискуссияға бер ниндәй ҙә яңылыҡ индермәнеләр, тип танып, көн тәртибенең өс вариантын индереп, көнбайыш державалар кәрәкле булған ... сигенә еттеләр», тип белдерҙе. Шуның менән Дэвис көнбайыш державаларҙың көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшергә теләмәүҙәрен тағы ла бер тапҡыр күрһәтте.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 14 май. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 14 майҙа, бөтә фронттарҙа ла Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, дошмандың контратакаларын уңышлы кире ҡағалар һәм уға йәнле көстә һәм техникала ҙур юғалтыуҙар яһайҙар, тип хәбәр итә. Трофейҙәр, шул иҫәптән, 60-ҡа яҡын пулемет, төрлө калибрҙа 16 орудие, 23 радиоустановка ҡулға төшөрөлдө.

Халыҡ армияһының частәре дошмандың 6 самолетын атып төшөрҙөләр.

Тыныслыҡ пакты өсөн!

МОНГОЛИЯ ХАЛЫҠ РЕСПУБЛИКАҺЫ

Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалары йыйнау Монголия Халыҡ республикаһының бөтә аймаҡтарында ла ҙур активлыҡ менән бара.

Тыныслыҡты яҡлауҙың милли комитетындағы тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Мөрәжәғәткә 214.242 кеше ҡул ҡуйған да инде.

КАНАДА

Тыныслыҡты яҡлауҙың Канада конгресының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалары йыйнау буйынса кампания Канадала әленән-әле киңерәк колас ала бара. «Канадиен трибюн» газетаһы, Ванкуверҙа 4 меңдән артығыраҡ ҡултамғаһы йыйналды ла инде, тип яҙа. Виндзорҙа автомобиль промышленносы эшселәре Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһындағы Мөрәжәғәтте бер булып ... ҡултамға ҡуйғандар.

УРУГВАЙ

Уругвай газетаһы «Верлат», биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалары йыйнау буйынса кампания актив үтә, тип хәбәр итә. Уругвайҙың 35 мең тыныслыҡты яҡлаусыһы Мөрәжәғәткә үҙенең ҡултамғаһын ҡуйған да инде.

Ҡултамғаларын йыйнау буйынса кампанияны көсәйтеү маҡсатында тыныслыҡты яҡлауҙың Уругвай комитеты 26 майҙан 3 июнгә тиклем «тыныслыҡ аҙнаһын» үткәрергә ҡарар иткән.

14 май. (ТАСС).

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

МӘКТӘПТӘРҘӘ ФИЗИК ТӘРБИӘ

Беҙҙең илебеҙҙә йәштәргә рухани һәм физик көстәрен һәр яҡлап үҫтереү өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылған. Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ йәштәр тураһында өҙлөкһөҙ хәстәрлек күрәләр һәм уларҙы таҙа, шат, көслө һәм ҡыйыу итеп үҫтереү өсөн көрәшәләр. Йәштәрҙе физик яҡтан тәрбиәләү коммунистик тәрбиә системаһының бер тармағы булып тора.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты 1948 йылдың 27 декабрендә сығарған ҡарарында, физик тәрбиәнең государство әһәмиәтен күрһәтеп, Мәғариф министрствоһын уҡыусыларҙы физик яҡтан тәрбиәләү эшен яҡшыртырға бурыслы итте. «Физик тәрбиә дәрестәренең сифатын күтәрергә, кластан тыш түңәрәктәрҙә физкультура эшен киң йәйелдерергә, физкультура эшенә киң массаны ылыҡтырыуға һәм ГТО значкистәрен әҙерләүгә айырыуса иғтибар бирергә. Уҡыу йорттарында физкультура коллективтарының эшен яҡшыртыуҙы һәм спорт өсөн йәш кадрҙар тәрбиәләүҙе тәьмин итерлек төрлө саралар күрергә», тиелә ул ҡарарҙа.

Спорт оҫталарының сафтарын тулыландырыуҙа мәктәптәр бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанаҡ булып торалар. Шуға күрә мәктәптәрҙәге физкультура коллективтары ВКП(б) Үҙәк Комитетының ҡарарын үтәүҙә ҙур роль уйнайҙар.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы үтәүҙә Башҡортостандың мәғариф ойошмалары, йәштәргә физик тәрбиә биреү өлкәһендә государство әһәмиәте тотҡан сараларҙы тормошҡа ашырыуҙа һәр ваҡыт инициатор булыусы комсомол ойошмаларының ярҙамына таянып, 1950 йылда уҡыусылар араһында физкультура һәм спорт эштәрен үҫтереү өлкәһендә ҙур ғына уңыштарға өлгәште.

Республика мәктәптәрендә физкультура коллективтарының һаны 1950 йылға план буйынса 1220 булырға тейеш булһа, улар 1328-гә еткерелде, ә коллективтарҙағы уҡыусыларҙың һаны 99816 кешегә етте. Значкистарҙың һәм разрядниктарҙың һаны ла бик күпкә арттырып үтәлде. Хәҙерге көндә ГТО-I значоклы 6095 кеше, ГТО-II значоклы 347 кеше бар.

Республикала планға индерелгән I разрядле 2 спортсмен урынына 7 спортсмен, II разрядле 10 спортсмен урынына 133 спортсмен, III разрядле 250 спортсмен урынына 868 спортсмен әҙерләнде.

Күп райондар физкультураны үҫтереү буйынса 1950 йылға билдәләнгән планды арттырып үтәнеләр. Уларҙың әсенә Шишмә, Зианчура, Белоҡатай, Иглин, Баймаҡ райондарын һәм Октябрьский, Стәрлетамаҡ, Өфө ҡалаларын индерергә була.

Шул уҡ ваҡытта Стәрлетамаҡ, Ҡандра, Краснокам, Благовар, Салауат һәм башҡа ҡайһы бер райондар планды үтәмәнеләр әле. Был хәл күрһәтелгән райондарҙа мәғариф бүлектәренең һәм комсомол комитеттарының мәктәптәрҙәге физик тәрбиә эше менән насар етәкселек итеүҙәрен, мәктәп директорҙары алдында киҫкен талап ҡуймауҙарын күрһәтә. Ҡайһы бер директорҙар һәм уҡытыусылар әле ошоға тиклем физкультураға, бигерәк тә спортҡа уҡыусыларҙың уҡыуына ҡамасаулаусы һәм уларҙы төп дәрестәрҙән ситләтеүсе бер нәмә тип ҡарайҙар.

Спорт менән шөғөлләнеү өлгәшеүҙе түбәнәйтеүгә алып бара тигән ҡараш тормошта дөрөҫләнмәй. Барыһы ла эштең ҡуйылышына бәйләнгән. Спорт менән шөғөлләнеп, шул уҡ ваҡытта «отличноға» уҡыған уҡыусыларҙан бик күп миҫалдар килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, Өфөнөң 11-се мәктәп уҡыусыһы Казикаев Джек үҫмерҙәр төркөмөндә 200 метрға йүгереүҙә республика рекордын яулап алды һәм шул уҡ ваҡытта мәктәпте көмөш медаль менән тамамланы. Шул иҫәпкә Өфөнөң 44-се мәктәбе уҡыусыһы, йөҙөү спорты буйынса РСФСР чемпионы Соколов Юрийҙе; 45-се мәктәп уҡыусыһы, барьер аша йүгереү буйынса БАССР чемпионы Тәлле Тамараны; 11-се мәктәп уҡыусылары В. Душинде һәм А. Каримскийҙе, 3-сө мәктәп уҡыусыһы З. Валиеваны, Стәрлетамаҡтың 3-сө мәктәп уҡыусыһы А. Девяткоҙы һәм башҡа бик күп уҡыусыларҙы индерергә мөмкин.

Физик тәрбиә мәсьәләләре менән бөтә уҡытыусылар коллективы ҡыҙыҡһынһа, физкультура уҡытыусыһына класс етәкселәре ярҙам итһә, спорт эштәре менән комсомол ойошмаһы ла шөғөлләнһә, физкультура һәм спорт, уҡыусыларҙың физик һәм рухани көстәрен нығытыу менән бергә, бер уҡ класта икенсе йылға ҡалыуға ҡаршы, юғары өлгәшеү һәм бөтә фәндәрҙән дә тулы баһалы тәрән белем алыу өсөн уңышлы көрәш алып барырға ярҙам итәләр.

ВЛКСМ-дың XI съезы комсомол ойошмаларына физик тәрбиә эшенең сифатын күтәреүҙә мәктәптең директорына һәм уҡытыусыларына ярҙамды көсәйтергә ҡушты.

Комсомол ойошмаларының инициативаһы буйынса Өфөнөң 44-се, 19-сы мәктәптәрендә һәм Благовещенскийҙа уҡыусы комсомолецтарҙың көсө менән 1950—1951 йылғы ҡышҡы сезонда катоктар төҙөлдө. Был мәктәптәрҙең комсомол ойошмалары Ҡуйбышев ҡалаһы һәм Горький ҡалаһы уҡыусыларының башлап ебәргән хәрәкәтен күтәреп алдылар һәм ошо уҡыу йылының ҡышҡы сезонында уҡыусылар менән кластан тыш спорт эштәре алып барыуҙы ойоштороҙолар.

Ләкин күп кенә мәктәптәрҙең комсомол ойошмалары, шулай уҡ ВЛКСМ-дың район комитеттары был мөһим мәсьәләгә һалҡын ҡарайҙар, етерлек хәстәрлек күрмәйҙәр.

Мәктәптәрҙә физик тәрбиә дәрестәре төп дәрестәрҙең береһе булып әйләнергә тейеш. Ә бының өсөн мәктәптәрҙә физик тәрбиә эшен алып барыуҙа район мәғариф бүлектәре, мәктәп директорҙары, физкультура комитеттары һәм комсомол ойошмалары етәкселекте яҡшыртырға тейештәр. Мәктәптәрҙә физик тәрбиә эштәрен бөтә уҡыу йылы буйына дөрөҫ алып барыуға өлгәшергә кәрәк.

В. Голуб,
Башҡорт АССР-ы Мәғариф министерствоһының өлкән инспекторы.

БӨГӨН КИНОЛАРҘА:

«Октябрҙә» — «ЯҢЫ БОЕЦТӘР БАҪЫРҘАР».
«Салауатта» — көндөҙ — «СОВЕТ СЫУАШИЯҺЫ» һәм «ЯҢЫ ШАНХАЙҘА», кис — «МИНЕ КӨТ».
«Уралда» — «ИКЕ БОЕЦ».
Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «БЕРЕНСЕ СТАРТ».

ХӘСТӘРЛЕКЛЕ БУЛЫҒЫҘ—

Янғындан һәм башҡа стихиялы бәлә-ҡазаларҙан үҙ йортоғоҙҙағы милкегеҙҙе страховать итергә ашығығыҙ

ГОССТРАХ ТҮБӘНДӘГЕ НӘМӘЛӘРҘЕ СТРАХОВАТЬ ИТӘ:

Йорт йыһаздары, өҫ кейемдәре, аяҡ кейемдәре һәм эске кейемдәр, тегелгән материалдар, тегеү һәм яҙыу машиналары, музыка инструменттәре, радиоприемниктәр һәм фотоаппараттар, спорт һәм юл нәмәләре, китаптар, ноталар һәм художество предметтәре, велосипедтәр һәм мотоциклдар, теш врачы кабинеттәренең, медицина һәм башҡа шундай кабинеттәрҙең йыһаздары.

Йорт милкен теләһә ниндәй суммаға страховать итергә мөмкин.

ләкин тотолоуына скидка ҡуйып, государствоның берҙәм баклап һатыу хаҡтары буйынса уның үҙ хаҡынан да юғарыраҡ түгел.

КАЛАЛАРҘА ЙОРТ МИЛКЕН СТРАХОВАТЬ ИТКӘН ӨСӨН

түбәндәге түләү билдәләнгән:

1000 һумлыҡ страховой сумманан йылына 1 һумдан алып 4 һумға тиклем (милктең ниндәй бинала — таштан, ағастан йәки ҡатнаштырып эшләнгән бинала тотолоуына ҡарап).

Госстрахтың БАССР буйынса Управлениеһы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәләр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01965 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы Тираж 26.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 96 (8813) 1951 йыл 18 МАЙ йома

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СССР ФИНАНС МИНИСТЕРСТВОҺЫНЫҢ БЕЛДЕРЕҮЕ (1-се бит).
ЯҘҒЫ СӘСЕҮ ЭШТӘРЕН ТИҘЕРӘК ТАМАМЛАРҒА! Е. Тулбаев. — Төнгө сменаларҙа тракторсыларҙың етештереүсәнлеген күтәрәйек! (1-се бит).
ПРОПАГАНДИСТАРҒА ҺӘМ МАРКСИЗМ-ЛЕНИНИЗМ ТЕОРИЯҺЫН ҮҘ АЛДАРЫНА ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘРГӘ ЯРҘАМҒА: Ибраһим Гулин. — И. В. Сталиндең «Октябрь революцияһы һәм рус коммунистарының тактикаһы» тигән хеҙмәте тураһында (2-се бит).
ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитете пленумы (2-се бит).
ӘҘЕРЛӘҮҘӘР МИНИСТЕРСТВОҺЫ РАБОТНИКТАРЕНЕҢ РЕСПУБЛИКА КӘҢӘШМӘҺЕ (3-сө бит).
Һ. Вәлиев. — Яңы урожай өсөн ... ҡабул итеүгә техник базаларҙы ваҡытында әҙерләргә (3-сө бит).
ГЕРМАНИЯНЫ РЕМИЛИТАРИЗАЦИЯЛАУҒА ҠАРШЫ ХАЛЫҠТАН ҺОРАУ АЛЫУҘЫҢ ӘҺӘМИӘТЕ ТУРАҺЫНДА ВИЛЬГЕЛЬМ ПИКТЕН РАДИО АША СЫҒЫШЫ (4-се бит).
ДҮРТ ДӘҮЛӘТ СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРҘАРЫ УРЫНБАСАРҘАРЫНЫҢ ӘҘЕРЛЕК КӘҢӘШМӘҺЕ (4-се бит).
СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ: М. Суслов. — Картофты квадрат тәртибендә оялап ултыртыу (4-се бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Коммунизм төҙөү эшенә ҙур вклад

[illegible]

...ныҡ ныҡытыу һәм донъяла тыныслыҡты тәьмин итеү теләге менән тулы булған совет кешеләре 1951 йылдың программаһын да шулай срогынан алда үтәү өсөн фиҙакәр көрәшәләр. Илгә промышленность продукцияһын һәм ауыл хужалығы продукттарын тағы ла күберәк етештереү өсөн социалистик ярышты әленәнәле киңерәк йәйелдерәләр, яңы резервтәрҙе хәрәкәткә килтерәләр. Улар хеҙмәт подвигтары менән бергә, үҙҙәренең һаҡлыҡтары менән дә коммунизм төҙөлөшөнә ҙур вклад индерәләр.

Бөтә совет халҡы СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы государство заемын сығарыу тураһында Совет хөкүмәтенең ҡарарын ысын күңелдән, ҡайнар теләк менән ҡаршы алды. Подписка ғәйәт ҙур патриотик күтәренкелек менән үтте. Эшселәр, колхозсылар һәм совет интеллигенцияһы заемға берҙәм һәм ойошҡанлыҡ менән яҙылып, һөйөклө Ватаныбыҙға, коммунистар партияһына һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға үҙҙәренең тәрән бирелгәнлектәрен демонстрацияланылар. 1951 йылдың 3 майында 30 миллиард һум суммаһында сығарылған яңы заем ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 34 миллиард 452 миллион 893 мең һум күләмендә йәғни 4 миллиард 452 миллион һумдан күберәк суммала арттырып урынлаштырылды.

Советтар Союзының башҡа өлкәләрендәге һәм крайҙарындағы кеүек үк, беҙҙең республикабыҙҙа ла СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең государство заемын урынлаштырыу ҙур ойошҡанлыҡ менән үтте. Ишембай, Октябрьский, Белорет, Черниковск, Өфө ҡалаларында, Баймаҡ, Бөрйән, Хәйбулла, Бөрйән, Саҡмағош, Иләш, Маҡар, Шишмә, Ҡырмыҫҡалы һәм башҡа күп кенә райондарҙа подписка айырыуса активлек менән барҙы. Эшселәр, колхозсылар һәм совет интеллигенцияһы Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан күтәреүгә үҙҙәренең һаҡлыҡ аҡсаларын государствоға үтескә ҙур теләк менән һәм, үткән йылғыға ҡарағанда, байтаҡ ҙурыраҡ суммала бирҙеләр.

Хеҙмәтсәндәр государство заемдарының СССР халыҡ хужалығын артабан үҫтереүҙә ниндәй әһәмиәт тотҡанлығын, үтескә бирелгән һаҡлыҡтарҙың тыныс төҙөлөш эштәрен һәм тормошобоҙҙоң сәскә атыуына йүнәлдерелеген яҡшы аңлайҙар.

— Беҙҙең заемдарыбыҙ, — тине үҙенең сығышында Өфө нефть эшкәртеү заводының ҡарт операторы, стахановсы иптәш Ищенко митингела, — ул хеҙмәтсәндәр өсөн мең-мең яңы торлаҡтар, яңы санаторийҙар, ул бөйөк төҙөлөштәр. Империалистар яңы һуғышҡа ҡотороноп әҙерләнгән бер ваҡытта, беҙҙең илебеҙҙә коммунизмдың гигант төҙөлөштәре киң йәйелдерелде. Был, бөтә донъяла тыныслыҡ фронтының ныҡыуы һәм киңәйеүе тигән

[illegible]

...цияһы, дөйөм торлаҡтар, водопровод төҙөләсәк. Беҙ яңы заемға бер кешеләй булып яҙылдыҡ.

Хеҙмәтсәндәр СССР халыҡ хужалығын үҫтереү заемына берҙәм яҙылыу менән бергә, үҙҙәре эшләгән участкала хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, эш күрһәткестәрен яҡшыртыу буйынса конкрет йөкләмәләр алдылар.

Тыныс төҙөлөш пландарын тормошҡа ашырыуҙа тағы ла активерәк ҡатнашыу, мәһабәт гидроэлектростанциялар, һуғарыу каналдары төҙөлөшөн тиҙләтеүгә булышлыҡ итеү йөҙөнән республиканың колхоз крәҫтиәндәре подписка ваҡытында уҡ яҙылған суммаларының естән бер өлөшө самаһын аҡсалата индерҙеләр. Райондарҙа ауыл эшсәндәре араһында заем взностарын срогынан алда индереү эше киң йәйелдерелә. Был йәһәттән бигерәк тә Баймаҡ, Бозаяз, Краснокам, Хәйбулла, Бөрйән, Саҡмағош, Шаран, Ҡырмыҫҡалы һәм башҡа шуның кеүек райондарҙың колхозсылары яҡшы өлгө күрһәтәләр. Мәҫәлән, Баймаҡ районында колхозсылар үҙҙәре яҙылған подписка суммаларының 84, Бозаяз районында — 58, Бөрйән районында — 57, Краснокам районында — 47, Хәйбулла районында — 46 процентен аҡсалата индерҙеләр инде. Саҡмағош, Маҡар, Шишмә, Шаран, Федоровка райондарында ла колхозсылар подписка суммаларын срогынан алда түләүҙе киң йәйелдерәләр.

Капиталистик илдәрҙә заемдан килгән средстволар һуғыш маҡсаттарына, яңы һуғыштар әҙерләүгә, башҡа илдәрҙе баҫып алыуға, реакцияны көсәйтеүгә китһә, совет заемдары тулыһынса халыҡ интерестарына яуап бирә. Совет заемы — ул социалистик төҙөлештең яңы еңеүе, тыныслыҡ эшенә яңы вклад, халҡтың коммунизмға табан тайпылышһыҙ хәрәкәт итеүендә яңы ҡеүәтле көс булып тора. Заемға биргән средстволарыбыҙ йөҙәрсә яңы заводтар, фабрикалар, шахталар, домналар, электростанциялар, каналдар һәм культура учреждениеләре төҙөүгә, яңы материаль ҡиммәттәрҙе барлыҡҡа килтереүгә файҙаланылалар. Беҙҙең заемдарыбыҙ государство интерестарының хеҙмәтсәндәрҙең шәхси интерестәре менән бергә тығыҙ ҡушылғанлығының гүзәл өлгөһө булып хеҙмәт итәләр. Совет заемдары Тыуған илебеҙҙең халыҡ хужалығын үҫтереүгә, хеҙмәтсәндәрҙең материаль-тормош һәм культура кимәлен күтәреүгә, тынысыҡ эшен ныҡытыуға йүнәлтелгәндәр.

Совет кешеләренең үҙ социалистик государствоһына үтескә биргән хеҙмәт һаҡлыҡтары халыҡ хужалығын һәм культураны артабан күтәреү эшенә, беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөлөшөнә хеҙмәт итәсәк.

СССР Финанс министерствоһының белдереүе

30 миллиард һумлыҡ суммаға 1951 йылдың 3 майында сығарылған СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең 1951 йылғы Государство заемы 15 майға 34 миллиард 452 миллион 893 мең һумлыҡ, 4 миллиард 452 миллион 893 мең һумға артығыраҡ итеп таратылды.

Заемдың билдәләнгән суммаһынан байтаҡ артыу айҡанлы, СССР Министрҙар Советенең күрһәтеүе нигеҙендә, заемға артабан яҙылыуҙы 1951 йылдың 17 майынан бөтә урындарҙа ла туктатырға СССР Финанс министерствоһы тарафынан бойорок бирелде.

СССР Финанс министры А. ЗВЕРЕВ.

Яҙғы сәсеү эштәрен тиҙерәк тамамларға!

☆

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ КӨНДӘЛЕГЕ

ПЛАНДАН ТЫШ СӘСӘБЕҘ

Аҫҡар. (Телефон аша). Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары агротехник кимәлдә үткәреү буйынса алған социалистик йөкләмәне үтәп, Әбйәлил районының ауыл хужалығы эшсәндәре яҙғы культуралар сәсеүҙең государство планын 16 майға 100,2 процентҡа, шул иҫәптән бойҙай сәсеүҙе 105,6 процентҡа үтәнеләр. Пландан тыш сәсеүҙе дауам иттерәбеҙ.

ВКП(б)-ның Әбйәлил райкомы секретаре **Ғ. Вахитов.**

район Советы исполкомы председателе **У. Ибраһимов.**

Беҙҙең бригада алдынғы сафта

Яҙғы сәсеү эштәрен яҡшы агротехник шарттарҙа, юғары сифатлы итеп үткәреүҙә баҫыусылыҡ бригадаһы хәл иткес роль уйнай. Беҙҙең бригада члендәре яҙғы баҫыу эштәренә тәүге көндәрҙән үк ойошҡан рәүештә сыҡтылар. Шуға күрә, бригада колхоз правлениеһенең күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алыуға ирешт.

Үҙебеҙгә бирелгән сәсеү планын, беҙ срогынан алда үтәнек. Эш сифаты яҡшы булды.

Яҙғы сәсеүҙә һабансылар, тырмасылар һәм сәсеүселәр үҙ-ара ярышып эшләнеләр. Ат сәскесе менән эшләүсе йәш колхозсы Закиров көндәлек норманы икс тапҡырға арттырып үтәп барҙы.

Һабансыларҙан Зарипов Әмирхан, Таһиров Закирьян иптәштәр яҡшы эшләнеләр. Улар комсомолецтар. Үҙҙәре артынан бөтә колхозсы йәштәрҙе эйәрттеләр.

Тәүге сәскән бойҙай ашлыҡтары берҙәм һәм тигеҙ булып сыҡтылар. Беҙ артабан сәсеүлектәрҙе тәрбиәләп үҫтереү сараларын күрәбеҙ.

У. Динисламов,
Учалы районы Сталин исемендәге колхоздың баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры.

☆ ☆

Башҡорт АССР-ы колхоздарында баҫыу эштәре барышы

(Үтәлеш, 1951 йылдың 15 майына, процентарҙа)

Тотҡан урыны	Районлар	Бөтә яҙғы культуралар сәсеүе	[illegible]	Мал азығы культуралары сәсеүе
1	Хәйбулла	105,7	58	78
2	Баймаҡ	101,5	57	55
3	Әбйәлил	100	71	75
4	Матрай	97,3	59	45
5	Зиансура	95,2	71	75
6	Йомағужа	93,6	70	120
7	Бүздәк	93,1	71	76
8	Абзан	92,9	77	47
9	Белорет	92	—	30
10	Стәрлетамаҡ	91,6	73	54
11	Туймазы	90,1	101	106
12	Учалы	89,9	72	19
13	Миәкә	88,6	67	62
14	Шишмә	88	63	85
15	Ҡыйғы	87,6	—	40
16	Дәүләкән	87,1	51	64
17	Күгәрсен	87	72	49
18	Благовар	86,4	75	98
19	Стәрлебаш	86,1	100	64
20	Балтас	85,9	104	59
21	Маҡар	85,3	—	64
22	[illegible]	85,2	—	76
23	Шаран	85	100	81
24	Иләш	83,7	75	52
25	Балаҡай	83,5	38	78
26	Әлшәй	83,4	57	78
27	Саҡмағош	83	102	72
28	Йәрмәкәй	82,9	76	77
29	Тәтешле	82,6	—	63
30	Салауат	82,5	—	37
31	Дүртөйлө	81,9	92	52
32	Ауырғазы	81,5	62	62
33	Ғафури	81,2	52	41
34	Бакалы	80,3	80	90
35	Яңауыл	80,3	103	54
36	Ҡырмыҫҡалы	80	83	62
37	Кейөргәзе	79,8	60	53
38	Мишкә	79,8	100	41
39	Өфө	79,8	85	79
40	Воскресен	79,2	72	46
41	[illegible]	79,2	—	11
42	Бишбүләк	78,7	70	70
43	Федоровка	78,5	93	50
44	Борай	77,7	90	59
45	Бөрйән	77,6	—	8
46	Мәләүез	77,4	57	55
47	[illegible]	77,2	75	45
48	Бозаяз	76,4	92	70
49	Ҡалтасы	76	100	61
50	Архангельск	75,3	—	67
51	Покровка	75,3	—	44
52	Краснокам	74,2	100	43
53	Нуриман	73,3	—	74
54	Бөрө	69,2	100	48
55	Аҫҡын	68,9	—	66
56	[illegible]	67,8	—	35
57	Байкыбаш	67,6	65	55
58	Иглин	67,2	100	55
59	Мәсетле	65,2	—	52
60	Дыуан	64,8	—	44
61	Благовещен	61,6	113	47
62	Ҡариҙел	61	—	33
63	Оло Теләк	54,9	—	60
64	Октябрьский ҡалаһы	75,3	—	165

• • •

15 майға яровой культуралар сәсеү планы республика буйынса 81,9 процентҡа, шуның эсенән бойҙай сәсеү планы 99,6 процентҡа үтәлде.

Хәйбулла районы колхоздары яровой культуралар сәсеү планын 105,7 процентҡа үтәнеләр. Ләкин яровой культуралар сәсеү эше Оло Теләк районы колхоздарында бик аҡрын бара. Благовещен, Дыуан райондарында ла шундай уҡ хәл.

Мал азығы культуралары сәсеү — общественный малсылыҡты үҫтереүҙә мөһим сара. Йомағужа районы малсылыҡ азығы культураларын сәсеү планын 120 процентҡа, Туймазы — 106 процентҡа үтәнеләр. Ләкин күп кенә райондарҙа был мөһим эшкә серьез әһәмиәт бирелмәй әле. Йылайыр, Учалы, Белоҡатай райондарында мал азығы культуралары сәсеү планы оло булһа яртылаш та үтәлмәгән.

Һис кисекмәҫтән һәр бер колхозда иртә культураларҙы сәсеү эшен тиҙерәк тамамлау, тары һәм картоф сәсеүҙе массовый йәйелдереү өсөн бөтә сараларҙы күрергә кәрәк.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Даһигә биргән вәғәҙәне үтәүҙә

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне намыҫ менән үтәү юлында Октябрьский нефтселәре хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, оборудованиеләрҙе яҡшыраҡ файҙаланыу өсөн социалистик ярыш йәйелдерҙеләр.

«Туймазыбурнефть» трестының 2-се номерле бораулау конторалһының механика мастерскойында нәләмә биреүсе насостарға балсыҡ юллдереүсе клапандарҙы, гайкаларҙы, төрлө ҙурлыҡтағы аҫҡыстарҙы һәм башҡа деталдарҙы штамплау эше үҙләштерелде. Хәҙер механика мастерскойы коллективы март айынан бирле ике сменала эшләй.

«Туймазынефть» трестының 5-се номерле промыселаһының бер скважинаһында дизель менән эшләүсе насос пар ярҙамында хәрәкәткә килтерелә торған насос менән алмаштырылды. Унда пар урынына скважинанан сығыусы газ баҫымының көсө файҙаланыла. Был газ әлек ҡулланылмай ине.

Трактор конторалһында әлек, йөк бушатып, кире ҡайтҡан саҡта, тракторҙарҙың 50 — 60 проценты буш ҡайта ине. Хәҙер бындай хәл бөтерелде. Тракторҙар ҡайтыш юлда йөк төйәп ҡайта башланылар.

Октябрьский нефтселәре, бөйөк даһигә биргән вәғәҙәне үтәү өсөн фиҙакәр көрәшеп, булған мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланыу өсөн тырышалар, алдынғы эш алымдарын ҡулланыусылар һаны хәҙер артҡандан-арта бара.

Ғ. Рамиев,
ВКП(б)-ның Октябрьский ҡала комитетының промышленность бүлеге инструкторы.

Төҙөлөш ойошмалары рационализаторҙарының хеҙмәте

«Башнефтестрой» трестының рационализаторҙары быйыл, үткән йылдағыға ҡарағанда ла, яҡшыраҡ эшләйҙәр. Бынды йәнә дүрт ай эсендә генә трест буйынса 71 рационализаторлыҡ тәҡдим индерелде. Шуларҙан 29 тәҡдимде производствоға индереү 150 мең һум экономия бирҙе.

Йәш мастер Ямгуров, столяр Парферьев, мастер Шмельков һәм башҡа иптәштәр — иң актив рационализаторҙар. Улар тарафынан яһалып производствоға индерелгән күп кенә ҡиммәтле тәҡдимдәр торлаҡтар төҙөлөшөндә материалдарға экономия яһауға, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә һәм күп хеҙмәт талап итеүсе эштәрҙе еңеләйтеүгә йүнәлдерелгәндәр.

Трест рационализаторҙары юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең тыуған көнө — 21 декабргә тиклем трестҡа, кәмендә, 2 миллион һум экономия бирерлек 700 рационализаторлыҡ тәҡдим яһап, уларҙы тормошҡа ашырырға йөкләмә алдылар.

Ш. Мостафин,
«Башнефтестрой» трестының рационализация буйынса инженеры.

Пар һөрөү планы үтәлде

Баймаҡ. Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективы быйыл яҙғы баҫыу эштәрен ҡыҫҡа агротехник срокта, үҙған йылға ҡарағанда ете көнгә әлек тамамланы.

Сәсеү тамамланыу менән үк бөтә тракторҙар май пары һөрөү эшенә ҡушылды. Совхоздың алдынғы механизаторҙары Ростов, Комаров, Ловушкин иптәштәр С — 80 тракторы менән смена нормаларын 200—230 процентҡа тиклем еткереп үтәнеләр. Һөҙөмтәлә совхоз 6500 гектар майҙанда пар һөрөү планын срогынан алда үтәне.

НЕФТЬ СЫҒАРЫУҘА ХУЖАЛЫҠ ИҪӘБЕНДӘГЕ КОМПЛЕКСЛЕ УЧАСТКАЛАР

Нефть промышленносе министерствоһы «Азнефть» берекмәһе «Кировнефть» тресы Бинәгәсе промыселаһының өлкән инженеры Сталин премияһы лауреаты А. Г. Кафаровтың һәм бер группа работниктарҙың нефть промыселаларында хеҙмәт методтарын артабан камиллаштереү тураһындағы бөлдерүсен тупланы.

Нефть сығарыу буйынса был промыселаны бригадалар хужалыҡ иҫәбендәге комплексле участкалар итеп яңынан ойошторолғандар. Был участкаларҙа скважиналарҙы эксплуатацияға бәйләнешле булған — ер аҫты ремонты, тикшеренеү хеҙмәте, ер өҫтө оборудованиеләрен хеҙмәтләндереү һәм башҡа шуның кеүек бөтә эштәр тупланған.

Был нефть сығарыу промышленносенең участкаларында хужалыҡ иҫәбен индереүҙе тулыһынса тормошҡа ашырыуға мөмкинлек бирҙе.

Ай ярымлыҡ эш — яңыса эшләүҙең ҡиммәтле һөҙөмтәләрен бирҙе. Бинәгәсе промысела дүрт айлыҡ планды арттырып үтәне. Хеҙмәт етештереүсәнлеге 13 процентҡа күтәрелде. Простойҙар ҡырҡа ҡыҫҡартылды, квалификациялы күп эшселәр башҡа участкаларҙа файҙаланыу өсөн бушатылды.

Нефть промышленносе министры Н. К. Байбаковтың приказы буйынса хужалыҡ участкаларында эш тәжрибәләрен киңәйтеү өсөн «Краснодарнефть», «Грознефть», «Укрнефть», «Башнефть», «Куйбышевнефть» һәм «Ҡаҙағыстаннефть» берекмәләренең, шулай уҡ хужалыҡ иҫәбендәге комплексле участканы ойошторасаҡ «Азнефть» берекмәһенең бөтә трестарында берәр промысела буләнә.

ТӨНГӨ СМЕНАЛАРҘА ТРАКТОРҘАРҘЫҢ ЕТЕШТЕРЕҮСӘНЛЕГЕН КҮТӘРӘЙЕК!

Машина-трактор станцияларының төп бурысы — бөтә ауыл хужалығы культураларының урожайын күтәреүҙән, общественный малсылыҡ өсөн ныҡлы азыҡ базаһы булдырыуҙан һәм колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан ныҡытыуҙан тора.

Был бурыстарҙы уңышлы хәл итеү, беренсе нәүбәттә, ауыл хужалығындағы бай техниканы һәм резервтарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуға, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә бәйләнгән. Ә быға трактор агрегаттарының эшен ике сменала ойошторғанда, һәр бер трактористең смена нормаһын арттырып үтәүен тәьмин иткәндә генә ирешергә мөмкин. Шуға күрә төнгө сменаларҙың эшен ойоштороуға айырыуса серьез иғтибар биреү талап ителә.

Ҡарамалы Ғөбәй, Дәүләкән, Ирәндек МТС-тарындағы күпселек трактор агрегаттарында төнгө сменаларҙың эше лә, көндөҙгө сменаларҙағы кеүек үк, ойошторолған. Шуға күрә бында, башҡа МТС-тарға ҡарағанда, шартлы һәр бер трактор менән эшләп сығарыу 20—25 процентҡа артыҡ тәшкил итә.

Ләкин күп кенә МТС етәкселәре төнгө сменаларҙың эшен ойоштороуға тейешле иғтибар бирмәйҙәр, шул сәбәпле ҡайһы бер трактор бригадаларында машиналар төндә бөтөнләй файҙаланылмайҙар. Был, билдәле, МТС-тарға баҫыу эштәрен колхоздар менән төҙөшкән договор буйынса иң яҡшы агротехник сроктарҙа үтәүгә мөмкинлек бирмәй. Мәҫәлән, Ерекле МТС-ында баҫыу эштәренең иң ҡыҙыу ваҡытында ла һәр бер шартлы тракторға тәүлегенә ни бары 3-әр гектар, ә Шаран МТС-ында 4.1 гектар, Языково МТС-ында 4,2 гектар, Әбдрәшит МТС-ында 3,8 гектар ғына ер эшкәртелгән. Был МТС-тарҙа бындай түбән етештереүсәнлеккә бары тик трактористарҙың смена нормаларын үтәмәүҙәре, бигерәк тә төнгө сменаларҙың эшенә тейешле иғтибар бирелмәүе менән генә аңлатырға була. Ерекле МТС-ында эшләнгән 1434 трактор сменаһынан ни бары 104 смена ғына, Шаран МТС-ында 420 трактор сменаһынан 75 смена ғына нормаларын үтәгәндәр. Шаран МТС-ында Илмурзин, Крылов иптәштәр етәкселек иткән трактор бригадаларында төнгө сменала нормаһын үтәгән бер генә тракторист тә юҡ.

Трактор агрегаттарының төнгө сменала насар эшләүҙәренең төп сәбәбе — МТС етәкселәренең машина-паркын төндә эшләүгә насар әҙерләүҙәрендә һәм уларҙың эшенә ныҡлы контроль булдырмауҙарында. Мәҫәлән, Языково МТС-ында оло көнгә тиклем 9 трактор, Шаран МТС-ында 6 трактор төндә эшләү өсөн электр менән йыһазландырылмаған. Ерекле МТС-ында һәр төндә 8 — 10 трактор эшләмәй ултыра. «Яңы юл» колхозында иптәш Харисов етәкселек иткән трактор бригадаһында күптән түгел ике СТЗ—НАТИ тракторы, төнгө сменала эшләү өсөн заданиә бирелмәгәнлектән генә, киске сәғәт 8-ҙән иртәнге алтыға тиклем эштә файҙаланылманы. «Беренсе Май», Карл Маркс исемендәге һәм башҡа колхоздарҙа ла шундай уҡ хәл. Шуға күрә был МТС-та тракторҙарҙың төнгө сменалағы етештереүсәнлеге, көндөҙгөгә ҡарағанда, 2—3 тапҡырға кәм.

Языково МТС-ы хеҙмәтләндергән «Победа» колхозында бер С—80 һәм ике СТЗ тракторы прицепщиктәр булмағанлыҡтан төнгө сменала эшләмәйҙәр. Чкалов исемендәге колхозда ла шундай уҡ сәбәп менән һәр төндә 2—3 трактор эшләмәй.

Тракторҙар паркын бына шулай насар файҙаланыу, трактористарҙың смена нормаларын үтәмәүҙәре күп, кенә МТС-тарҙа колхоздар менән төҙөшкән договорҙы боҙоуға, баҫыу эштәрен әҙәүгә килтерҙе. Мәҫәлән, Ерекле МТС-ы дым ҡаплау, иртә культуралар сәсеү, культивациялау һәм башҡа эш төрҙәре буйынса планды үтәүҙе тәьмин итмәне. Пар һөрөү эштәре лә шулай уҡ бик һүлпән бара.

Хәҙер тракторҙарҙы оҫта файҙалана белеү ҙур әһәмиәткә эйә. Бурыс—сәсеү эштәренән бушаған бөтә тракторҙарҙы ла һис кисекмәҫтән пар һөрөүгә ҡушыуҙан тора. Һәр бер МТС-тың трактор паркы тәүлек әйләнәһенә файҙаланылырға тейеш. Сәсеүҙә эшләгән агрегаттарҙы төндә һөрөүгә ҡушырға кәрәк. Пар һөрөү эше хөкүмәт тарафынан билдәләнгән срокта— 10 июндән дә һуңға ҡалмай тамамланырға тейеш.

Тракторҙарҙы төндә тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн агрегатты эшкә әҙерләүгә, уны бөтә смена буйынса туҡтауһыҙ хеҙмәтләндереүгә айырыуса иғтибар биреү талап ителә. Әгәр ҙә трактор электр менән йыһазландырылмаған булһа йәки ул ниндәй ҙә сәбәп менән төҙөк булмаһа, улай агрегаттарҙы һис кисекмәҫтән ябай фонарҙар менән тәьмин итергә кәрәк. МТС етәкселәре иғтыбарһыҙ эшләү ерҙе насар эшкәртеүгә, сей ҡалдырыуға йәки булмаһа агрегаттың төндә простой яһауына килтереүен аңларға тейештәр.

Агрегаттарҙың төндә бер туҡтауһыҙ эшләүҙәре өсөн алдан заготовка бүлеп ҡуйыу һәм уның менән трактористарҙы ентекләп таныштырыу ҙур әһәмиәткә эйә. Улар ҡайһы урында машинаны ниндәй тиҙлектә алып барыуҙы билдәләргә, хатта айырым ваҡиғаларҙа төнгө эш өсөн уңайлы урындарҙы һайлап алып, төндә эшләү өсөн ауыр булған урындарҙы көндөҙ эшкәртеүгә ҡалдырырға тейештәр. Шул уҡ ваҡытта төнгө эш өсөн заготовкаларҙы агрегатҡа бөтә смена буйынса етерлек итеп бирергә кәрәк. Ҡайһы бер урындарҙа заготовка етмәгәнлектән, агрегаттар кен яҡтырғанды көтөп, бер нисә сәғәт буйына простой яһайҙар.

Шул уҡ ваҡытта төнгө сменаларҙы хеҙмәтләндереүгә айырыуса иғтибар бирергә кәрәк. Һыу, яғыулыҡ килтереү өсөн урындар алдан билдәләнгән булырға тейеш. Баҫыу станында йәки вагончиктарҙа төндә трактор бригадаһы бригадиренең йәки уның ярҙамсыһының дежурить итеүе шарт. Тракторҙар йәки тағылма инвентарҙар төҙөк булмаған ваҡиғала улар шунда уҡ был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү сараларын күрергә тейештәр. МТС һәм колхоз етәкселәренең төнгө сменаларҙың эшенә ныҡлы контроль булдырыуҙарына өлгәшергә кәрәк. Сөнки ҡайһы бер агрегаттарҙа трактористар контроль булмауҙан файҙаланып, төн уртаһына тиклем эшләйҙәр ҙә, унан ялға туҡтайҙар йәки тракторҙарҙы ташлап ауылға ҡайтып китәләр.

Трактор бригадаһы бригадирҙарының баҫыусылыҡ бригадалары менән берлектә төнгө сменаларҙа хеҙмәтте ойоштороуҙы, тракторҙарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеген яҡшыртыу буйынса конкрет сараларҙы эшләп сығарыуға өлгәшеү ҙур әһәмиәткә эйә. Был саралар бөтә трактористарҙың да төнгө сменала нормаларҙы үтәүҙәренә һәм арттырып үтәүҙәренә мөмкинлек бирәсәк.

Төнгө сменаларҙың эшен өлгөлө ойоштороу МТС-тарҙа машина-трактор паркын файҙаланыуҙа ҙур резерв булып тора. Был резервтарҙы тулыһынса файҙаланыу — МТС, колхоз етәкселәренең, партия, совет ойошмаларының мөһим бурысы ул.

Инженер-механик Е. Тулбаев.

Пропагандистәргә һәм марксистик-ленинсе теорияны үҙ алдарына өйрәнеүселәргә ярҙамға

И. В. Сталиндең „Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы“ тигән хеҙмәте тураһында

И. В. Сталиндең «Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы» тигән хеҙмәте 1924 йыл декабрь айында яҙылған һәм 1925 йыл ғинуар айында баҫылып сыҡҡан. Был хеҙмәт — иптәш Сталиндең марксизм-ленинизм хазинаһына вклад булып иңгән әҫәренән береһе— илебеҙҙә социализм төҙөү өсөн партияның көрәш тарихында мөһим урын алып тора һәм кадрҙарыбыҙҙы идея-теоретик яҡтан ҡоралландырыуҙа уның әһәмиәте хәҙерге ваҡытта ла ифрат ҙур.

«Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы» партия троцкизмға ҡаршы ҡаты көрәш алып барған осорҙа яҙылды. 1924 йыл Троцкий партияға ҡаршы көрәшеүен дауам итеп, «Октябрь һабаҡтары» исемле мәҡәлә яҙып сыҡты. Ул үҙенең ошо мәҡәләһендә большевиктәр партияһы һәм Октябрь революцияһы тарихын боҙоп күрһәтте, Лениндең социалистик революция тураһындағы теорияһын кире ҡағырға, ленинизмде троцкизм менән алмаштырырға маташты, үҙенең меньшевистик «перманент революция» теорияһын тағы ла һөйрәп сығарҙы һәм уның «дөрөҫлөгөн» иҫбат итмәксе булды.

Троцкийҙең бындай бысраҡ эшенә партия тыныс ҡына ҡала алманы. Иптәш Сталин етәкселегендә Троцкийға ҡаршы ҡаты отпор бирелде. Иптәш Сталин үҙ хеҙмәтендә Троцкийҙе аҙым һайын фаш итеп, марксизм-ленинизм теорияһын юғары күтәрҙе һәм уның сафлығын һаҡланы.

Иптәш Сталиндең «Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы» тигән хеҙмәте дүрт главанан тора. Беренсе главала иптәш Сталин Октябрь революцияһының тышҡы һәм эске обстановкаһына анализ яһай, һәм, революцияның еңеүен еңеләйтергән тышҡы тәртиптәге өс хәл, шулай уҡ эске тәртиптәге алты уңайлы шарттар булды, тип яҙа.

Тышҡы тәртиптәге **беренсе хәл** шунан тора: Октябрь революцияһының еңеүе бөтә донъя һуғышы дауам иткән саҡта булды. Бөтә донъя һуғышы, беҙҙең илдә Октябрь революцияһы еңгәндән һуң бер йыл үткәс — 1918 йыл ноябрь айында ғына туҡтаны. Ошо бер йыл буйына империализм лагерендә үлемесле ҡаты көрәш барҙы. Был хәлдең Октябрь революцияһы өсөн әһәмиәте ҙур булды, сөнки империалистик государстволар үҙ-ара үлемесле ҡаты көрәш менән шөғөлләнеү сәбәпле, Россияла еңгән социалистик революцияға ҡаршы ташлана алманылар.

Икенсе хәл. Һуғышҡа ҡатнашҡан бөтә илдәрҙең хеҙмәтсән массалары һуғыштан интегеүҙең сигенә барып еткәйнеләр. Халыҡ һуғыштың бөтөүен талап һәм уны талап итте. Октябрь революцияһы алдынан империалистик һуғышҡа ҡаршы булған хәрәкәт көсәйгәндән-көсәйә барҙы. Октябрь революцияһы өсөн был хәлдең бик етди әһәмиәте булды, сөнки империалистик һуғышҡа ҡаршы хәрәкәт революция ҡулына ҡеүәтле ҡорал бирҙе, революция өсөн булған көрәш менән империалистик һуғышҡа ҡаршы булған көрәштең икеһен бергә ҡушыу мөмкинлеген еңеләйтте.

Еңеүгә өлгәшкән социалистик революция Россияны империалистик һуғыш ҡосағынан тартып алды һәм донъя хеҙмәтсәндәре араһында тыныслыҡ булдырыу мөмкинлеген күрһәтте. Бына шуның өсөн Октябрь революцияһы үҙенә ҡарата «...Көнбайыштағы эшселәр араһында ла, шулай уҡ көнсығыштағы иҙелгән халыҡтар араһында ла массовый теләктәшлек тыуҙырҙы» (И. Сталин).

Өсөнсө хәл. 1914 — 1918 йылдағы бөтә донъя һуғышы капитализмдең дөйөм кризисын көсәйтте, көнбайышта һәм көнсығышта революцион кризисте өлгөртте. Көнбайыш илдәрҙә эшселәр «үҙ» капиталистәренә ҡаршы ҡеүәтле көрәшкә күтәрелделәр, көнсығышта империализмға ҡаршы милли азатлыҡ хәрәкәте башланды. Октябрь революцияһы көнбайыш илдәрҙәге эшселәрҙең һәм көнсығыш халыҡтарының революцион көрәшенә ғәйәт ҙур йоғонто яһаны һәм бөтә донъя күләмендә революцион кризисте артабан үҫтерҙе. Шул уҡ ваҡытта көнбайыш эшселәренең революцион көрәше һәм көнсығыш халыҡтарының милли азатлыҡ хәрәкәте донъя империализмына ҡаршы көрәштә Октябрь революцияһының ышаныслы таянысы була алды.

Октябрь революцияһы еңеүен еңеләштергән тышҡы тәртиптәге өс хәл һәм уларҙың әһәмиәте, иптәш Сталин күрһәтеүенсә, бына ошоларҙан тора.

«Ләкин тышҡы тәртиптәге хәлдәрҙән башҡа, — тип яҙа иптәш Сталин, — Октябрь революцияһының еңеүен еңеләштереүҙә тағы ла тотош бер талай эске уңайлы шарттар ҙа булды». Ул шарттар түбәндәгеләрҙән тора: Беренсенән, Октябрь революцияһының еңеүе Россия эшселәр синыфының бик ҙур күпселегенең иң актив булышлыҡ итеүе менән тәьмин ителде. Шулай итеп, Октябрь революцияһы буржуаз обществоның берҙән-бер революцион булғаны пролетариат синыфының революцияһы булып еңде. Икенсенән, Россия пролетариаты Октябрь революцияһына тик яңғыҙ булып ҡына килмәне, уның артынан хеҙмәтсәндәр массаларының күпселеге эйәрҙе, пролетариатҡа булышлыҡ итте. Был хәл Октябрь революцияһы еңеүе өсөн баһа биреп бөтөрә алмаҫлыҡ әһәмиәтле булды, сөнки крәҫтиән ярлыларының һәм һаллат массаһының күпселеге пролетариатҡа булышлыҡ күрһәтмәгәндә, Октябрь революцияһының еңеүгә иреша алыуы мөмкин булмаҫ ине. Өсөнсөнән, Россия пролетариаты башында, уның етәксеһе — большевиктәр партияһы торҙо. Көрәштә сыныҡҡан, һыналған, һәр ваҡыт масса менән бәйләнеш тотҡан, тәжрибәле һәм дисциплиналы большевиктәр партияһы буржуазия властен емереү һәм пролетариат диктатураһын урынлаштырыу өсөн үҙенең бөтә көсөн мобилизовать итте, бөтә халыҡты рус империализмына ҡаршы көрәшкә күтәрҙе.

Дүртенсенән, Октябрь революцияһының дошмандары — помещиктар, капиталистар, уларҙың партиялары, шулай уҡ ваҡ буржуазия партиялары (меньшевиктәр, эсерҙәр һ. б.) еңеүгә бирелмәҫлек көслө булманылар. Помещиктар синыфы крәҫтиән «бунттары» һөҙөмтәһендә мораль яҡтан бик зәғифләнгәйне, капиталистар синыфы политик тормошта бик үк тәжрибәле түгел ине. Ә илде меньшевиктәр һәм эсерҙәр партияһына килгәндә, улар әштә буржуазия менән бергә ҡушылып, хыянатсыл политика үткәреү арҡаһында, банкротлыҡҡа төшкәйнеләр. Шуның өсөн дә был дошмандарҙы юлдан ситкә ырғытып ташлау революцион рус пролетариаты өсөн бик үк ауыр булманы.

Бишенсенән, беҙҙең илдә еңгән социалистик революция һәм уның государствоһы ҡарамағында бик киң пространство булды, «бында ул иркен манёвр яһарға, обстановка талап иткәндә, кире сигенергә, хәл алырға, көс йыйнарға һ. б. булдыра алды» (И. Сталин).

Алтынсынан, «Октябрь революцияһы контрреволюцияға ҡаршы үҙенең көрәшендә ил эсендәге аҙыҡ-түлек, яғыулыҡ һәм сырьё ресурстарының етерлек булыуына иҫәп тота алды» (И. Сталин).

Ил эсендә аҙыҡ-түлек, яғыулыҡ һәм сырьё ресурстарының етерлек булыуы Октябрь революцияһы өсөн ғәйәт ҙур әһәмиәтле хәлдәрҙең береһе булып торҙо. Сөнки империалистик государстволар ваҡытлыса беҙҙең илдең тышҡы бәйләнешен өҙһәләр ҙә йәки илебеҙҙең ҡайһы бер мөһим районнарын баҫып алһалар ҙа, бының менән улар социалистик революцияның яҙмышын үҙгәртә алманылар.

Октябрь революцияһының еңеүен билдәләгән тышҡы һәм эске обстановка бына ошоларҙан тора. «Был обстановка Октябрь революцияһы еңеүенең яҡшы уҡ еңел эшләнеүенә сәбәп булды» (И. Сталин).

«Был, әлбиттә, — тип яҙа иптәш Сталин, — Октябрь революцияһының тышҡы һәм эске обстановка яғынан минустары булманы, тигән һүҙ түгел». Ундай минустар тураһында әйтеп, иптәш Сталин ике төп моментте күрһәтә. Уның береһе — «Октябрь революцияһының билдәле яңғыҙлығы, уның эргәһендә һәм күршеһендә ул таяна алырлыҡ совет иленең булмауы», икенсенән, «илдә пролетар күпселектең булмауы».

Былар, әлбиттә, Октябрь революцияһы өсөн ыңғай хәл булманылар һәм ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙылар.

Икенсе главала иптәш Сталин Октябрь революцияһының ике үҙенсәлеген аса һәм уларға анализ яһай.

«Беҙҙә пролетариат диктатураһы, — тип яҙа иптәш Сталин, — пролетариат менән хеҙмәтсән крәҫтиән массаларының союзы нигеҙендә, был һуңғыларға пролетариат тарафынан етәкселек ителгән хәлдә килеп сыҡҡан власть булып тыуҙы». Был факт Октябрь революцияһының беренсе үҙенсәлеген билдәләй. Ә икенсе үҙенсәлек иһә шунан тора: «Беҙҙә пролетариат диктатураһы, капиталистик яҡтан күберәк алға киткән башҡа илдәрҙә капитализм һаҡланған хәлдә, капиталистик яҡтан аҙыраҡ алға киткән бер илдә социализмдең еңеүе һөҙөмтәһе булып нығыны» (И. Сталин). Октябрь революцияһының ике иң мөһим үҙенсәлектәре бына ошолар.

Иптәш Сталин тарафынан күрһәтелгән ике үҙенсәлектең төп өс әһәмиәте бар. Беренсенән, улар Октябрь революцияһының эске мәғәнәһен һәм тарихи әһәмиәтен кәүҙәләндерәләр, икенсенән, пролетар государство властенең эске һәм тышҡы политикаһындағы үҙенә бер төрлөлөктә асыҡ күрһәтәләр, өсөнсөнән, Троцкийҙең «перманент революция» теорияһының оппортунистик тәбиғәтен фаш итәләр.

Октябрь революцияһының беренсе үҙенсәлеге түбәндәгеләрҙе аңлата: Социалистик революцияны буржуаз обществоның иң революцион синыфы — пролетариат ҡына булдыра ала. Ләкин ул бының өсөн халыҡ күпселеген, хеҙмәтсән массаны — крәҫтиән ярлыларын үҙ тирәһенә тупларға һәм уларҙың етәксе көсө булырға тейеш. Шулай булмағанда социалистик революцияның еңә алыуы мөмкин түгел.

Беҙҙә «Октябрь революцияһы шуның өсөн еңде, — тип яҙа иптәш Сталин, — сөнки ул буржуазиянан уның крәҫтиән резервтарын тартып ала алды, был резервтарҙы ул пролетариат яғына ауҙарып ала алды һәм пролетариат был революцияла ҡалалағы һәм ауылдағы миллионлаған хеҙмәт кешеләре массаларының берҙән-бер етәксе көсө булды».

Октябрь революцияһы үҙенең эске мәғәнәһе менән — социалистик революция. Уның төп политик маҡсаты: буржуазияны ҡолатыу, пролетариат диктатураһын урынлаштырыу, социалистик обществоны төҙөү—пролетар булмаған хеҙмәтсән массаның, бигерәк тә крәҫтиән ярлыларының маҡсатына ҡаршы килмәне. Шуның өсөн, Россия пролетариаты Октябрь революцияһына яңғыҙ булып ҡына килмәне, уның артынан хеҙмәтсән массаларҙың күпселеге эйәрҙе һәм пролетариатҡа булышлыҡ итте, ә пролетариат уларҙың етәксе көсө булды. Ошо нигеҙҙә, йәғни Октябрь революцияһы һөҙөмтәһендә урынлаштырылған пролетариат диктатураһы, пролетариат менән хеҙмәтсән крәҫтиән массаларының капиталды ҡолатыу өсөн, социализмдең тамам еңеүе өсөн булған синфи союзы булып барлыҡҡа килде һәм нығыны.

Октябрь революцияһының беренсе үҙенсәлегенә анализ яһап, иптәш Сталин: «Был революция — пролетариат диктатураһы тураһындағы Ленин теорияһының классик тормошҡа үткәрелеүе ул», — тип күрһәтә. Һәм шул уңайҙа Троцкийҙең «перманент революция» теорияһын юҡҡа сығарып тәнҡитләй, уның контрреволюцион теория икәнлеген һәм пролетариат диктатураһына ҡаршы көрәшеүҙә тик шарлатан булып ҡына торғанлығын фаш итә.

Троцкийҙең «перманент революция» теорияһы Лениндең пролетариат диктатураһы тураһындағы теорияһына ҡапма-ҡаршы булыуын күрһәтеп, иптәш Сталин былай тип яҙа:

«Ленинсә, пролетариат диктатураһы— «капиталды ҡолатыу», өсөн, «социализмде тамам төҙөү һәм нығытыу», өсөн пролетариат менән хеҙмәтсән крәҫтиән массаларының союзына таяна торған власть ул.

Троцкийсә, пролетариат диктатураһы— «крәҫтиәндәрҙең киң массалары» менән «дошманлыҡ бәрелештәренә» инеүсе һәм «ҡаршылыҡтарҙың» хәл ителешен тик «пролетариаттың донъя революцияһы аренаһынан ғына эҙләүсе власть ул».

Әлбиттә, Троцкийҙең ул саҡта донъя пролетариаты революцияһы тураһында һөйләнеүе фәҡәт ялған бер нәмә икәнлеге аҙаҡтан һәр кем өсөн асыҡ булды. Троцкий ул саҡта былай һөйләнеүе менән асылда Совет властенә, партияға ҡаршы, беҙҙең илдә социализм төҙөүгә ҡаршы үҙенең контрреволюцион эшен йәшерергә маташты. Ләкин уның эше барып сыҡманы, иптәш Сталин етәкселегендә партия троцкизмде тар-мар итте.

Октябрь революцияһының икенсе үҙенсәлегенә анализ яһап, иптәш Сталин: «Был революция — Лениндең пролетар революция тураһындағы теорияһын практикала ҡулланыуҙың өлгөһө ул» — тип яҙа.

Ленин, империализмде өйрәнеп, капиталистик илдәрҙең экономик һәм политик үҫешенең тигеҙһеҙлеге тураһындағы законды асты. Бының нигеҙендә ул пролетар революция тураһында яңы теория тыуҙырҙы. Был теория бөтә ил оппортунистәренең пролетар революция тураһындағы теорияларын юҡҡа сығарған, фәнни нигеҙҙә эшләнгән яңы теория булды. Оппортунистар теорияһы буйынса, пролетар революция тик капиталистик яҡтан күберәк алға киткән илдәрҙә генә башланырға мөмкин, тип ҡаралды, ә бер илдә, етмәһә тағы капиталистик яҡтан аҙ алға киткән илдә, социализмдең еңеүе һис тә ихтимал булмаған бер нәмә итеп иҫәпләнде. Оппортунистарҙың бындай ҡараштарын юҡҡа сығарып, Ленин бер илдә, хатта әгәр был ил капиталистик яҡтан аҙыраҡ алға киткән булһа ла, социализмдең еңеүе мөмкин тип иҫбат итте һәм Октябрь революцияһы Ленин теорияһының дөрөҫлөгөн тулыһынса раҫланы.

Иптәш Сталин Лениндең бер илдә социализм еңеүе тураһындағы теорияһын артабан үҫтерҙе. Ул үҙенең «Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы», тигән хеҙмәтендә бер илдә социализмдең тулы еңеүе, социалистик обществоны төҙөү мөмкин, ләкин тик бер илдә генә социализмдең тамам еңеүе мөмкин түгел, тип аңлатты. Шул уңайҙа иптәш Сталин Троцкийҙең бер илдә социализм төҙөү мөмкин түгел, тигән ҡарашын фашланы, уның был ҡараштары Лениндең пролетариат революцияһы тураһындағы теорияһына ҡапма-ҡаршы контрреволюцион тәбиғәтле икәнен асып күрһәтте.

1924 — 1925 йылдарҙа иптәш Сталин троцкизмде идея ағымы булыу яғынан тар-мар итеү бурысын партия алдына килтереп ҡуйҙы һәм үҙе был бурысты үҙенең теоретик хеҙмәттәрендә, шул иҫәптән «Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы» тигән хеҙмәтендә тулыһынса үтәне.

«Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы» тигән хеҙмәттең өсөнсө главаһында иптәш Сталин Октябргә әҙерләү осоронда большевиктәр тактикаһының дүрт үҙенсәлеген күрһәтә һәм, Октябрь революцияһы тәжрибәһен дөйөмләштереп, большевиктәр партияһының тактик нигеҙе тураһындағы Ленин уҡыуын артабан үҫтерә.

Был үҙенсәлектәр нимән тора?

Беренсе үҙенсәлек. Октябрь социалистик революцияһына массаны әҙерләү эше менән тик бер генә партия, большевиктәр партияһы, бер үҙе генә етәкселек итте. Шулай булмағанда революцияның еңеүе мөмкин булмаҫ ине.

Әлбиттә, был осорҙа башҡа партиялар — меньшевиктәр һәм эсерҙәр партияһы ла масса менән етәкселек итеп маташты, улар башта массаның күпселеген үҙҙәренең артынан эйәртә алдылар. Ләкин меньшевиктәр һәм эсерҙәр социалистик революцияны маҡсат итеп ҡуйманылар. Киреһенсә, улар социалистик революцияның дошманы булдылар. Массаны социалистик революцияға өндәүсе һәм әҙерләүсе берҙән-бер партия большевиктәр партияһы булды. Большевиктәр, меньшевиктәргә һәм эсерҙәргә ҡаршы көрәшеп, массаны үҙ яғына ауҙарып алдылар һәм уны социалистик революцияға йүнәлдерҙеләр. Масса өсөн көрәш һөҙөмтәһендә большевиктәр социалистик революцияның политик армияһын төҙөнөләр.

Массаны социалистик революцияға әҙерләүгә бер үҙе генә етәкселек иткән, революцияның политик армияһын төҙөгән большевиктәр партияһы Октябрь восстаниеһе еңеүе һөҙөмтәһендә бер үҙе генә власте үҙ ҡулына алды һәм шулай булмауы мөмкин дә түгел ине.

«...Меньшевиктәр һәм эсерҙәр партияларын изоляциялау, — тип яҙа иптәш Сталин, — Октябрҙә әҙерләү эшенә етәкселек итеүҙең төп линияһы булды, — большевиктәр тактикаһының икенсе үҙенсәлеге шулай».

Бындай тактиканы ленинизмдең төп стратегик ҡағиҙәһе үҙе талап итте. Ул ҡағиҙәнең нимән торғанлығын иптәш Сталин былай тип аңлата:

1. «Яҡынайып килә торған революция сиселешө осоронда революция дошмандары таяна торған иң ҡурҡыныслы социаль терәк булып соглашатель партиялар торалар.

2. Был партияларҙы изолировать итмәйенсә тороп, дошманды (царизмде йәки буржуазияны) ҡолатыу мөмкин түгел.

3. Шунлыҡтан революцияны әҙерләү осоронда төп уҡтар был партияларҙы изолировать итеүгә, хеҙмәтсәндәрҙең киң массаларын уларҙан айырырға йүнәлдерелгән булырға тейеш» (И. Сталин).

1917 йылда Октябрҙә әҙерләү осоронда иң ҡурҡыныслы соглашатель партиялар: эсерҙәр һәм меньшевиктәр империализм таяна торған социаль терәк булып торҙолар, улар массаны империализм менән килешеүгә, буржуазияға баш әйеүгә табан һөйрәнеләр. Шунлыҡтан, «ул ваҡытта большевиктәрҙең төп уҡтары ошо партияларға ҡаршы йүнәлдерелде, сөнки был партияларҙы изоляциялмайынса, хеҙмәтсән массаларҙың империализмдан өҙөлешеүенә иҫәп тотоу мөмкин түгел, ә был өҙөлешеүҙе тәьмин итмәйсә, совет революцияһының еңеүенә иҫәп тотоу мөмкин түгел ине» (И. Сталин).

Большевиктәр, меньшевиктәрҙе һәм эсерҙәрҙе изоляциялау, уларҙан эшсе һәм крәҫтиән массаларын айырып алыу эшен «Бөтә власть Советтарға!» тигән лозунг аҫтында үткәрҙеләр, советтарҙы восстание органдарына, власть органдарына, яңы пролетар государство аппаратына әүерелдереү өсөн көрәштеләр. Был көрәш меньшевиктәрҙе һәм эсерҙәрҙе изоляциялау эшен еңеләйтте һәм пролетар революция эшен алға табан хәрәкәтләндерҙе. Был, большевиктәр тактикаһының өсөнсө үҙенсәлеге булды.

Большевиктәрҙең советтарҙы государство власе органдарына әүерелдереү тактикаһы хеҙмәтсәндәрҙең миллионлаған массаларын империализмдан айырҙы, империализм ҡоралы булған меньшевиктәр һәм эсерҙәр партияһын күҙҙән төшөрҙө — пролетариат диктатураһы еңеүенең мөһим шарты булды.

«Массаларҙы революцион позицияларға килтереп еткереү юлы менән уларҙы үҙ тәжрибәһендә партия лозунгыларының дөрөҫлөгөнә ышандыра белеү, — тип яҙҙы иптәш Сталин, — миллионлаған хеҙмәтсәндәрҙе партия яғына ауҙарып алыуҙың иң мөһим шарты булды». Октябрҙә әҙерләү осоронда большевиктәр тактикаһының дүртенсе үҙенсәлеге бына ошонан тора.

Һуңғы, бишенсе главала иптәш Сталин Октябрь революцияһының халыҡ-ара характеры, уның бөтә донъя күләмендәге әһәмиәте тураһында яҙа.

Октябрь революцияһының донъя күләмендәге төп әһәмиәте бөтәһенән дә элек шунан тора: «Ул донъя революцияһының беренсе этабын һәм уны артабан йәйеп ебәреүҙең базаһын тәшкил итә» (И. Сталин).

Бер илдә социализм еңеүе мөмкинлеге тураһындағы Ленин—Сталин теорияһы шулай уҡ бөтә донъя пролетариаты революцияһы тураһындағы теория булып тора. Ленин—Сталин донъя революцияһының үҫеү юлы бер илдә еңгән социализмдең нығыуы һәм уның уңыштары менән бәйләнгән, тип өйрәтәләр. «Беренсе еңгән илдә социализм ни тиклем нигеҙлерәк ныҡ ыңғай барһа, — тип яҙа иптәш Сталин, — был ил донъя революцияһын артабан йәйеп ебәреү базаһына, империализмде артабан тарҡалдырыу рычагына ни тиклем тиҙерәк әүерелә барһа, донъя революцияһы үҫешенең үҙе лә, бер талай яңы илдәрҙең империализмдан сығып китеү процессы үҙе лә шул тиклем тиҙерәк һәм нигеҙлерәк барыр».

Иптәш Сталиндең бынан 27 йыл элек әйткән был һүҙҙәренең дөрөҫлөгө һуңғы тарихи ваҡиғалар менән раҫлана.

«Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы» тигән хеҙмәт үткән тарихте дөрөҫ аңлау өсөн генә түгел, хәҙерге ваҡыттағы тарихи ваҡиғаларҙы, донъя революцияһы үҫешен сағылдырған ваҡиғаларҙы аңларға ярҙам итә, кадрҙарыбыҙҙы идея-теоретик яҡтан ҡоралландыра.

Ибраһим Гулин.

ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитете пленумы

ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитетенең ошо көндәрҙә булып үткән пленумы ҡалала культура-ағартыу эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында мәсьәлә тикшерҙе. Доклад менән ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты секретары иптәш **З. Нафиков** сығыш яһаны.

— Иптәш Сталиндең күрһәтмәләрен үтәп, Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә совет халҡы, — ти докладсы, — илебеҙҙә коммунизм төҙөү юлынан ышаныс менән бара.

Совет халҡының политик һәм культура кимәлен күтәреү коммунистик общество төҙөү буйынса бөйөк эштең айырылғыһыҙ өлөшө булып тора. Шуға күрә партияның Үҙәк Комитеты был эшкә айырыуса ҙур әһәмиәт бирә һәм уны бөтә партия ойошмаларының иғтибар үҙәгенә ҡуя.

Өфө ҡалаһында культура-ағартыу учреждениеләренең киң селтәре бар. Улар һуңғы йылдарҙа үҙҙәренең эштәрен байтаҡ яҡшырттылар. Театрҙарҙың репертуарҙары совет осоро тематикаһындағы яңы спектаклдәр менән байыҡтырылды. Театрҙарҙың коллективтары спектаклдәрҙең сифатлы булыуы өсөн ныҡышмалыраҡ эшләй башланылар.

Кинотеатрҙарҙың селтәре киңәйеү менән бергә, шулай уҡ уларҙың эштәре лә бер ни тиклем яҡшыртылды.

Ләкин театрҙар һәм кинотеатрҙар эшендә етешһеҙлектәр күп әле. Башҡорт государство опера һәм балет театры өсөн яңы репертуар эшләү ҡәнәғәтләнерлек түгел. Театрҙарҙың кәрәкле кадрҙар менән комплектовать ителмәүе, уларҙың эшенә ҙур ҡамасаулыҡ итә.

Кинотеатрҙар экрандарында, бигерәк тә ведомственный һәм профсоюз ойошмалары ҡарамағындағы киноустановкаларҙа документаль, ғилми-техник, ғилми-популяр фильмдәр һирәк күрһәтелә. Киноустановкалары булған предприятиелар һәм учреждениеләрҙең партия, профсоюз ойошмалары кинокартиналар һайлап алыуҙы икенсе дәрәжәләге работниктарға тапшыралар.

Ҡалалағы клубтар, музейҙар, библиотекалар һәм ҡыҙыл мөйөштәр эшендә уңышлы яҡтар булыу менән бергә, етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел. Тимер юлсылар бына бер нисә йыл инде культура үҙәгенән мәхрүм ителгәндәр. Өфө тимер юл управлениеһе һәм Дорпрофсоюз Андреев исемендәге клубты ике йыл ремонтлайҙар инде. Ләкин уның ҡасан бөтәүен әле лә әйтеүе ҡыйын.

Хеҙмәтсәндәрҙең культура кимәлен күтәреүҙә һәм уларҙы коммунистик рухта тәрбиәләүҙә радио бик мөһим роль уйнай. Уҙған йылда ҡалала 64 километр оҙонлоғонда яңы линия төҙөлгән булһа ла, радиолаштырылмаған квартираларҙың һаны һаман ҙур әле.

Ҡалала 30-ға яҡын урындағы әһәмиәттәге радио узелдар бар. Был узелдарҙы дөрөҫ файҙаланыу, улар аша тапшырыуҙарҙың сифатлы һәм идея-политик яҡтан йөкмәткеле булыуҙарына өлгәшеү мөһим бурыс булып иҫәпләнә. Шулай ҙа әлегә тиклем был радиоузелдар насар файҙаланылалар һәм тапшырыуҙарҙың йөкмәткеһендә йыш ҡына хәлдәрҙә ҙур ғына етешһеҙлектәр осрай.

Ҡалала лекторҙарҙың ҙур армияһы эшләй. Ләкин лекцион эштең кимәле һәм ҡоласы бөгөнгө көндә үҫә барған талаптарына яуап бирмәй. Был өлкәләге ҙур мөмкинлектәр файҙаланып еткерелмәй. Лекциялар уҡыуға ғилми работниктар һәм юғары уҡыу йорттарының уҡытыусылары аҙ ылыҡтырыла.

Докладсы парктарҙың, баҡсаларҙың һәм үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәктәренең эшенә ныҡлап туҡталды, был өлкәлә булған етди етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләп үтте һәм алда һис кисекмәҫтән үтәлергә тейеш булған конкрет бурыстарҙы күрһәтте.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа беренсе булып сығыш яһаған иптәш **Вандышев** (Дим район Советы исполкомы председателе) район хеҙмәтсәндәренең культура-ағартыу учреждениеләренә ҡарата булған талаптарының йомшаҡ үтәлеүе, ҡала партия һәм совет ойошмаларының ҡаланың ситтәге был районға етерлек тиклем иғтибар бирмәүҙәре тураһында һөйләне. Дим районында хатта тотош урамдар әлегә тиклем радиолаштырылмаған, Өфө тимер юл управлениеһе уға етәксе органдар тарафынан был турала бирелгән күрһәтмәне үтәмәй.

Тимер юл профсоюзы комитеты тимер юлсылар йәшәй торған райондарҙың береһендә стадион төҙөргә тейеш, бының өсөн уның етерлек средствоһы ла бар. Ләкин унда оҙаҡ ваҡыттарҙан бирле инде стадионды ҡайҙа — Дим районындамы йәки Молотов районында төҙөргәмә икәнлектә хәл итә алмайҙар.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге кинофикация правлениеһе начальнигы иптәш **Ғафаров** ҡала кинотеатрҙарының эшенә туҡталды.

Кинотеатрҙарҙың эше бер ни тиклем яҡшыртылһа ла, был өлкәлә һ[...] һеҙлектәр бар. Ҡала ситенә[...] халыҡты кино менән хеҙмәтлән[...] ғәтләнерлек түгел, кинотеатр[...] сылар ылыҡтырыу планын үт[...] ҙар, ә план уҙған йылдағы мен[...] тырғанда ике тапҡырға тиг[...] артҡан. Планды үтәү өсөн общ[...] ойошмаларҙың ярҙамы, колле[...] ҡарауҙы киң ҡулланыу, күсмә [...] ҙарҙың эшен һис кисекмәҫтән [...] талап ителә.

Профсоюз ойошмалары тар[...] һәм ведомственный предприятие[...] ған киноустановкалар эшенә [...] вет ойошмалары тарафынан тей[...] троль ҡуйылмаған. Был уҫ[...] шунлыҡтан, үҙ алдарына, пла[...] лайҙар.

Иптәш Ғафаров балаларға [...] теүҙә тәртипкә һалыу кәрәклеге [...] һында мәсьәлә ҡуйҙы. Өфөлә [...] күсмә кинолар ебәреү, унда [...] кинокартиналар күрһәтеү өсөн [...] киңлектәр бар. Ләкин мәктәптәр [...] ла мәғариф бүлеге ни өсөндер [...] файҙаланырға теләмәйҙәр.

Иптәш **Феденев** (Өфө ҡала Со[...] полкомының культура-ағартыу [...] гә мөдире) үҙенең сығышын [...] лар, үҙ эшмәкәрлек художество тү[...] ренең эшенә арнаны. Ҡаланың 1, [...] һәм 12-се библиотекалары, [...] монтлау заводы библиотекаһы [...] эштәрен яҡшы ғына ойоштороп [...] үҙҙәренең эштәрен китап бир[...] менән генә сикләмәйҙәр, массо[...] тик эштең башҡа киң формалары[...] методтарын ҡулланалар: доклад[...] циялар ойошторалар, уҡыусылар [...] ренцияһы үткәрәләр, күсмә библ[...] эшләй. Шулай ҙа ҡаланың бик [...] лиотекалары эшендә ҙур [...] юл ҡуйыла. 3, 11 һәм 13-сө [...] библиотекалар, государство сауҙа[...] никтәре профсоюзы өлкә комитеты [...] текаһы быға миҫал булып тора[...] лиотекаларҙың общественный [...] менән тығыҙ бәйләнеш тотмауҙа[...] ҙың үҙ тирәләренә актив туплай [...] ҙары бында төп сәбәп булып тор[...]

Библиотека работниктәре [...] тияның район комитеттары [...] лайҙар, уларҙың эштәрен тик[...] йешле инструктаждар биреү ет[...]

Иптәш **Пономарев** (2—13 [...] та ярыу заводы директоры) [...] тия, совет ойошмаларын Пәжәтер[...] ғы берҙән-бер клубтың эше[...] итмәгәндәре өсөн тәнҡитләне. Заво[...] һендәге клубта ойошторолған тү[...] етәкселәр булмау сәбәпле үҙҙәрене[...] рен йәйелдерә алмайҙар.

Иптәш Пономарев был клубта [...] ғы театраль көстәрҙең [...] ойоштороу ыңғай һөҙөмтә бирер [...]

Башҡорт АССР-ы Министрҙар С[...] эргәһендәге культура-ағартыу у[...] ниеләрә эштәре управлениеһе нач[...] иптәш **Нәзиров** ҡала культура-[...] учреждениеләренең эшен артабан [...] тыу, улар өсөн тейешле шарттар [...] рыу кәрәклеге тураһында һөйлә[...] ведомственный һәм профсоюз ойош[...] ҡарамағында булған библиотекал[...] клубтарҙың эшенә культура-ағарт[...] реждениеләре работниктәре тараф[...] государственный контролден тор[...] аппарылмауын күрһәтеп үтте.

Ҡалала культура-ағартыу учреж[...] ләре эшендә яңы биналар төҙөү, [...] рын үҙ урындарында файҙаланыу бу[...] са ҙур етешһеҙлектәр бар. Һуғышҡа[...] лем кооперация поляналә ике ҡат[...] клуб бар ине. Хәҙер ул икенсе м[...] файҙаланыла, ә яңы клуб төҙөү ту[...] да хәстәрлек күрмәйҙәр әле.

Бынан 11 йыл элек үк [...] лика хөкүмәте башҡорт әҙәбиәте[...] һалыусы халыҡ шағиры Мәжит Ғ[...] Өфөлә музей асыу тураһында ҡара[...] бул иткәйне. Ләкин уның буйынса [...] тиклем бер нәмә лә эшләнмәне.

ВЛКСМ-дың ҡала комитеты с[...] иптәш **Сибирцев** үҙенең сығышын[...] тәр араһында физкультура, спорт [...] йәйелдереүҙә, үҙ эшмәкәрлек ху[...] түңәрәктәренең эшен ойоштороуҙа [...] кәмселектәрҙе күрһәтеп үтте.

Баҡсалар үҙҙәренең эштәрен яҡ[...] ойошторманйҙар әле. Мәҫәлән, Яҡут[...] мендәге балалар паркы өлкә[...] паркынан бер нәмә менән дә айы[...] Унда балаларға ял итеү өсө[...] тыуҙырылмаған.

Иптәш Сибирцев «Баштрой» [...] «Искра» стадионын төҙөүҙе һүҙ[...] тәнҡитләне.

Пленум тикшерелгән мәсьә[...] са тейешле ҡарар ҡабул итте.

* * *

Пленум ойоштороу мәсьәләһе[...] ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитете[...] ганда һәм агитация бүлеге м[...] иптәш **А. Г. Егоровты** раҫланы.

„Ҡыҙыл Башҡортостан“ материалдары буйынса

„Сәсеү орлоҡтарына иғтибарһыҙ ҡараш“

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 72-се номерендә «Асҡын районы «Бүләк» колхозы етәкселәренең арталдән сәсеү майҙанын етерлек тиклем орлоҡ менән тәьмин итмәүҙәре тураһында хәбәр баҫылғайны.

ВКП(б)-ның Асҡын район комитетенең редакцияға хәбәр итеүенсә, «Сәсеү орлоҡтарына иғтибарһыҙ ҡараш» тигән [...] тикшерелеп, унда күрһәтелгән [...] лекторҙе бөтөрөүгә ҡарата үҙ [...] практик саралар күрелгән. Бер [...] та сәсеү майҙанын орлоҡ менән [...] итеүгә ғәмһеҙ ҡарағанлыҡтары [...] ләк» колхозының етәкселәренә [...] иҫкәртеү яһалған.

Әҙерләүҙәр министерствоһы работниктәренең республика кәңәшмәһе

Ошо көндәрҙә Өфөлә Әҙерләүҙәр министерствоһы работниктәренең республика кәңәшмәһе булып үтте. Кәңәшмәлә Әҙерләүҙәр министерствоһының район вәкилдәре, элеваторҙарҙың һәм Заготзерно пункттарының директорҙары, Заготзерноның эшке пункт мөдирҙәре һәм Әҙерләүҙәр пункттарының башҡа яуаплы работниктәре ҡатнаштылар.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар беренсе мәсьәлә буйынса Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡорт АССР-ы буйынса вәкиле иптәш Вәлиевтең 1950 йылда ауыл хужалығы продукттарын әҙерләү йомғаҡтары һәм Әҙерләүҙәр министерствоһы системаһының техник базаһын 1951 йылдың яңы урожайын ҡабул итергә әҙерләү тураһындағы докладын тыңланылар. Икенсе мәсьәлә буйынса—1951 йылдың тәүге ярты йыллығында государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыу планының үтәлеше тураһында Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡорт АССР-ы буйынса вәкиле урынбаҫары Ҡаюпов, өсөнсө мәсьәлә буйынса — 1951 йылда бесән әҙерләү эшен ойоштороу тураһында Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡорт АССР-ы управленииһенең бөртөклө һәм майлы культуралар секторы начальнигы Камалов иптәштәр доклад менән сығыш яһанылар.

Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡорт АССР-ы буйынса вәкиле иптәш Вәлиев үҙенең докладында былай тине:

— Иген — илдең көсө һәм ҡеүәте. Мул урожай өсөн көрәш — ул Совет государствоһының көсөн һәм ҡеүәтен тағы ла нығытыу өсөн көрәш тигән һүҙ. Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрен тиҙләтеү һәм тыныслыҡ өсөн көрәш тигән һүҙ. Бына ни өсөн Совет Башҡортостанының игенселәре үҙған йыл государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда үтәп, игенселектәге яңы еңеүҙәре тураһында бөйөк Сталинға рапорт биреү өсөн бөтә көстәрен биреп тырыштылар.

— Башҡортостан игенселәренең тырышлығы бушҡа китмәне, беҙ государствоға иген тапшырыу планының срогынан алда арттырып үтәлеүе тураһында И. В. Сталинға рапорт бирҙек. Ләкин был өлгәшеүҙәр беҙҙе тынысландырырға тейеш түгел. Сөнки Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡортостан органдарында етешһеҙлектәр бик күп әле. Былтыр государствоға майлы һәм техник культуралар тапшырыу планы республика буйынса үтәлмәне. Дыуан, Мәсетле, Баймаҡ, Яңауыл, Оло Теләк районлары был культураларҙы тапшырыу планын яртылаш та үтәмәнеләр.

Иптәш Вәлиев үҙенең докладында Әҙерләүҙәр министерствоһының байтаҡ ҡына райондарҙағы вәкилдәренең государствоға иген тапшырыу эшен урожай йыйпауҙың тәүге көндәренән үк ойоштороу өсөн көрәшмәүҙәрен, күп кенә элеватор етәкселәренең техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланмауҙарын тәнҡитләне.

Кәңәшмәлә һөйләнгән доклатлар буйынса фекер алышыуҙарҙа беренсе булып Әҙерләүҙәр министерствоһының Әлшәй районы буйынса вәкиле иптәш Лактионов сығыш яһаны.

— Әлшәй районы колхоздары, — ти иптәш Лактионов, — былтыр государствоға иген тапшырыу планын үтәнеләр. Ләкин Заготзерноның эшке пункттары иген ҡабул итеүгә ныҡлы әҙерләнмәүҙәре арҡаһында был мөһим кампания оҙаҡҡа һуҙылды. Быйыл беҙ Әҙерләүҙәр министерствоһының Дәүләкән районы работниктәре менән социалистик ярыш договоры төҙөнөк. Ярышта беренселекте алыр өсөн быйыл беҙ үткән йылғы хаталарҙы ял ҡуймаҫҡа тырышабыҙ, эшке пункттарҙа ремонт үткәреү һәм яңы келәттәр төҙөү сараларына айырыуса иғтибар итәбеҙ.

— Шаран районы игенселәре үҙған йыл мул урожай үҫтерҙеләр һәм государствоға иген тапшырыу планын 105 процентҡа үтәнеләр, — ти үҙенең сығышында Әҙерләүҙәр министерствоһының ошо райондағы вәкиле иптәш Королев. Ул район ауыл хужалығы органдарының быйылғы урожайҙы йыйнау эшенә әҙерлек менән оператив етәкселек итмәүҙәрен тәнҡитләй.

Унан һуң Дәүләкән элеваторы директоры иптәш Лаптев сығыш яһаны. Иптәш Лаптев элеватор коллективының 1951 йылдың урожайын ҡабул итергә быйыл өлгәлә әҙерләнеүҙе белдерҙе. Хәҙер элеваторҙың бөтә электр оборудованиеларына ремонт үткәрелгән. Әлә генә бер яңы келәт төҙөлдө, тағы ла ике келәт төҙөләсәк.

— Үҙған йылғы кеүек үк, быйылда,— тине Әҙерләүҙәр министерствоһының Ҡыйғы районы вәкиле иптәш Закиров, — Сулея элеваторы һәм Продукттар резерве министерствоһының Сулея базаһы яңы урожай игенен ҡабул итергә насар әҙерләнә. Механизмдар ремонтланмай, яңы келәттәр төҙөлмәй, иҫкеләренә ремонт башланмаған, юлдар насар. Ә база начальнигы иптәш Мамаев урожай йыйнау эштәре башланыуға ике ай ғына ваҡыт ҡалыуға ҡарамаҫтан, ашыҡмай, эште үҙ ағышына тапшырған.

— Техник базалар ремонтлау эше, — ти Заготзерноның Башҡортостан өлкә конторһының баш инженеры иптәш Коретников, — республика буйынса һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Элеваторҙарҙа һәм Заготзерноның әҙерләү пункттарында техника күп, тик быйыл ғына 3 миллион ярым һумлыҡ механизмдар алынды. Ләкин техниканы файҙаланыу мәсьәләһе менән беҙҙә бик аҙ шөғөлләнәләр. Алдынғы тәжрибәләрҙе өйрәнеү ойошторолмай. — Иптәш Коретников техниканы насар файҙаланыусы Заготзерноның Усть-Байҡы, Мәләүез һәм башҡа пункттарын ҡаты тәнҡитләне.

Әҙерләү пункттарында һәм элеваторҙарҙа техниканы юғары етештереүсәнлекле файҙаланыу өсөн көрәштең йомшаҡ ойошторолғанлығы, малсылыҡ продукттарын тапшырыуҙағы етешһеҙлектәр һәм бесән әҙерләү сараларының мөһимлеге тураһында башҡа сығыш яһаусы иптәштәр ҙә әйттеләр. Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡортостан работниктәре алдында торған бурыстар тураһында ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары Каменов һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы председателе урынбаҫары Ғатауллин иптәштәр сығыш яһанылар. Фекер алышыуҙарҙа бөтәһе 59 кеше ҡатнашты.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар яңы урожайҙы ҡабул итеүгә өлгәлә әҙерләнеү һәм уны яҡшы үткәреү, малсылыҡ продукттары тапшырыу планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылып, үҙҙәренә конкрет йөкләмәләр алдылар.

Беҙ, тип әйтелә йөкләмәлә, 1951 йылдың яңы урожай игенен өҙлөкһөҙ ҡабул итеүҙе тәьмин итер өсөн Әҙерләүҙәр министерствоһының республикалағы бөтә элеваторҙарын, үлсәү хужалыҡтарын, лаборатория инвентарҙарын һәм оборудованиеларын ремонтлауҙы 10 июлгә тамамларға, 110 мең тонна һыйышлы яңы иген келәттәре төҙөргә, эшке пункттарҙан иген сығарыуҙы 1 июлгә тамамларға, государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыуҙың йыллыҡ планын 7 ноябрь көнөнә, иген тапшырыу планын срогынан байтаҡ алда үтәргә һүҙ бирәбеҙ.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Медпунктты кадрҙар менән нығытыуға иғтибар бирелмәй

Ауыл медпункттары колхозсыларҙы медицина яғынан хеҙмәтләндереүҙә ҙур роль уйнай. Ләкин Архангель район һаулыҡ һаҡлау бүлеге ауылдарҙағы медицина пункттарын кадрҙар менән нығытыу эшенә иғтибар бирмәй. Мәҫәлән, Ҡыҙғы ауыл медицина пунктында тик һуңғы бер нисә ай эсендә генә 5 фельдшер алмашынды.

Һуңғы ваҡыттарҙа был ауылда фельдшер булып эшләгән иптәш Логачева үҙ бурысын яҡшы аңлап, эшен намыҫ менән башҡарып килде. Колхозсылар уның эше менән бик ҡәнәғәт инеләр. Фельдшер халыҡ араһында ҙур хөрмәт менән файҙаланды. Ләкин район һаулыҡ һаҡлау бүлеге мөдире иптәш Сычев фельдшер иптәш Логачеваны үҙ аппаратына эшкә алды. Уның урынына иптәш Х. Ашрафуллина фельдшер итеп билдәләнгәйнә. Ләкин ул хеҙмәтсәндәрҙең һорауҙарын бер нисек тә ҡәнәғәтләндерә алмай. Ашрафуллина медпунктҡа килгән ауырыуҙарға тейешле ярҙам күрһәтмәй. Шуның өҫтәүенә халыҡ менән тупаҫ мөғәмәлә итә. Хатта ул бала тыуҙырыусы ҡатындарға ярҙам күрһәтеүҙән дә баш тарта.

Ҡыҙғы ауыл Советындағы Куйбышев исемендәге колхоз район үҙәгенән 30-35 километр алыҫлыҡта йәшәй. Шуны иҫкә алып, бындағы медицина пунктына айырыуса иғтибар биреүҙе һәм әҙерлекле кадрҙар менән тәьмин итеүҙе һорайбыҙ.

Ф. Канафина.

Газеталар бик һуңлап тапшырыла

Күмертау поселкаһындағы (Көйөргәҙе районы) связь бүлеге работниктәре (начальнигы иптәш Сидоренко) подписчиктарҙы хеҙмәтләндереүгә яуаплыһыҙ ҡарайҙар. Шуның һөҙөмтәһендә бында өлкә һәм район газеталары подписчиктарға 8 — 10 көнгә һуңлап тапшырыла. Бер урындан икенсе урынға күсеп киткән иптәштәрҙең газеталары бөтөнләй юғалып ҡала.

Подписчиктарҙы хеҙмәтләндереү эшенең ошондай насар ҡуйылыуы өлкә һәм район газеталарын халыҡ араһында таратыу эшен йәйелдереүгә ҙур тотҡарлыҡ итә.

Район ойошмалары Күмертау поселкаһындағы связь бүлегенең эше менән ҡыҙыҡһынырға, газета алдырыусыларҙың һорауҙарын ҡәнәғәтләндереүҙә йылдам саралар күрергә тейештәр.

М. Мөхәмәтьянов.

Колхозда эшке мөмкинлектәрҙе файҙаланыуға иғтибар бирелмәй

Эшке мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланыу колхоз хужалығын алға ебәреүҙә ҙур роль уйнай. Ләкин Яңауыл районы «Союз» ауыл хужалығы артелендә быға тейешле иғтибар бирелмәй.

Бында һуңғы йылдарҙа электр станцияһы төҙөлөп эксплуатацияға тапшырылғайны. Ул ике генә көн электр көсө бирҙе лә, эштән туҡталып ҡалды. Ә колхоз етәкселәре уны төҙәтеп хоҙҡа ебәреү тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр.

Малсылыҡ фермаһын механизациялаштырыу өсөн үткән йыл колхоз 25 мең һумға локомобиль алғайны. Ләкин ул да файҙаланылмай. Асыҡ һауала ятҡанлыҡтан был локомобилдең күп кенә частәре тутығып бөткән. Колхоз председателе иптәш Биктимеровтан быныҡ сәбәбен һорашҡас, ул: «механизмдарҙы файҙаланыу өсөн колхозда тейешле кадрҙар юҡ һәм уның менән шөғөлләнергә ваҡыт та етешмәй» тип яуап бирҙе. Беҙҙеңсә, бында эш кадрҙар етешмәүендә түгел, ә эшке мөмкинлектәрҙе файҙаланыуға иғтибар бирелмәүендә.

Ф. Исламов.

Сталинсе төҙөлөштәрҙә

4. ДОН ДИҢГЕҘЕ

Волга—Дон каналы — ул ҙур комплекслы төҙөлөш. Бөгөнгө төҙөлөштөң проекты иптәш Сталиндең тәрән аҡыллы фекере менән, Бөйөк Ватан һуғышына тиклем файҙаланылған проектҡа ҡарағанда, бик ныҡ киңәйтелде, уның комплексына ҙур һуғарыу ҡоролмалары, ҡеүәтле гидроэлектр станцияһы төҙөү индерелде.

Әйтәйек, канал аҙер. Ләкин унан үткән Волга пароходтары, Дон йылғаһына сыҡһалар, артабан йөҙөп китә алмаҫтар ине. Сөнки Дон һыуы Калач тирәһендә судноларҙы йөрөтерлек түгел. Дон пароходтары Цимлянский станицаһына саҡлы ғына килә алалар. Был хәл йылғаның һыуын Калачка тиклем судноларҙы йөрөтерлек итеп күтәреүҙе талап итте. Һәм шуның өсөн дә, Цимлянский станицаһынан түбәнерәк бер урында Донды быуыу, ул плотинаға электр станцияһы һалыу, ә унан артҡан һыу менән Ростов һәм Сталинград өлкәләренән ҡоро тәбиғәтле ун өсөр районды ерҙәрен һуғарыу өсөн каналдар селтәре төҙөү планлаштырылды.

Бөгөнгө көндә, Волга — Дон каналының үҙендәге кеүек, был төҙөлөштәрҙә лә эш ҡайнай. Бөтә Дон буйында, уйнал кәңлеккә ятҡан райондарҙа киң масштаблы, ҡеүәтле механизмдар менән ҡоралландырылған төҙөлөш эштәре йәйелдерелгән. Бына оҙаҡламай, киләһе йылда уҡ бындағы гигант электр станцияһы эшләй башлар, әлеге Дон тоғайында тулҡынланып торған яңы диңгеҙ барлыҡҡа килер. Буласаҡ диңгеҙҙең төбө аҙер, тиерлек. Унда йәшәгән ҡаҙаҡтарҙың станицалары ситтәге һыртҡа игәгенә күсереп һалынғандар. Улар хәҙер иҫке ауылдар түгел. Яңы йорттарҙан торған колхоз поселкалары. Алма ағастары ла күсерелгән. Виноград баҡсалары яңы тупраҡта үҫәләр. Бөтә күсеңеү эштәре государствоның ҙур ярҙам күрһәтеүе иҫәбенә башҡарылды.

Быйылғы яҙ бөтәһен дә үҙгәртте бында. Тәбиғәтте генә түгел, кешеләрҙе һәм уларҙың характерҙарын да. Колхозсылар төҙөлөшкә килеп, яңы квалификация алдылар. Ҡайһы скреперист, ҡайһы бульдозерист. Теләгән эштә эшләргә өйрәнделәр улар. Инженер-техник работниктар эшселәрҙе өйрәтә, ә эшселәр уларға кәңәш бирә, улар төҙгән иҫке нормаларҙы ваталар, һәр эшкә рационализация индерәләр. Улар бында бергәләп тау-таш актаралар, төҙәйҙәр, коммунизм магистралеп һалыу срогын ике йылға ҡыҫҡартыу өсөн көрәшәләр.

...Самолет Цимлянск гидроузелына килеп еткәйне. Гигант төҙөлөштөң бөтә йөҙә, гөрләп торған майҙандары, төрлө механизмдар, бейек күтәрелгән корпустар менән гүзәл панорама булып күҙәләнде. Таҫма булып һуҙылған котловандарҙа эш ҡайнай. Өҫкә күтәрелгән кран башнялары, атлаусы экскаваторҙарҙың оҙон уптары күренеп ҡала. Котлованлар тәрән. Унда йөҙҙәрсә автомашиналар хәрәкәт итә. Ҡеүәтле экскаваторҙар уларға балсыҡ тейәп ебәрәләр. Уларҙан тыш ер ҡатламын умырып алып китеүсе скреперҙар, ерҙе һөрөп йөрөүсе бульдозерҙар, тигеҙләп йөрөүсе катоктар таҡҡан тягачтар ҙа аҙ түгел бында. Ундай механизмдар бер нисә миллион кубометр ер эштәре башҡарғандар ҙа инде.

Цимлянск гидроузелындағы эш 1948 йылда уҡ башланғайны. Был ваҡыт эсендә бында бик күп ярҙамсы объекттар төҙөлдө. Хәҙер инде гидроэлектр станцияһы төҙөлә башланған, ҙур плотина өсөн ер полотноһы өйөү башҡарыла, судноларҙы үҙғарыу өсөн кәрәк булған ике шлюзға котлованлар ҡаҙыла.

Плотина ҙур күләмле эш талап итә. Уның оҙонлоғо 12,8 километр. Ул Дон диңгеҙендәге һыуҙы 26 метрға күтәрерлек итеп төҙөлә. 2600 квадрат километр майҙанлы урынға йыйылған 12,6 миллиард кубометр күләмендәге һыуҙы тотоу өсөн плотинаның киңлеге лә, һис һүҙһеҙ ҙур. Уның өҫкө киңлеге генә лә 300 метр буласаҡ. Уның өҫтөнән станцияның үҙ механизмдарынан тыш тимер юлы һәм автострада уҙғарылыр.

Билдәле, бындай плотина өсөн бик күп ер эштәре башҡарырға кәрәк. Уға кәрәк булған күләмдәге балсыҡ массаһын кешеләр һәм аттар көсө менән генә түгел, хатта автомашиналар, поездар менән дә бындай ҡыҫҡа срок эсендә ташып бөтөү мөмкин түгел. Ватан заводтары бының өсөн ер һурғыс снарядтар тип аталған махсус механизмдар әҙерләне.

Ер һурғыс снаряд һыу трамвайына оҡшаған махсус судноға урынлаштырылған. Уның алдында ер һурғыстың күтәргес һәм төшөргөс рамаһы. Унда агрегаттың ерҙе ваҡлай торған мороно һыу эсенә төшөрөлә. Был морон ярҙың һыу аҫты өлөшөнә төртөлә һәм үҙенән осондағы фрезаһы менән ярҙы ваҡлап һыуға ҡатыштыра һәм пульпа тигән иҙелмә яһай. Был иҙелмә судноларғы ҡеүәтле насос ярҙамында эске һурылып алына ла, понтондар өҫтөнән уҙғарылған торбалар аша оҙатылып, плотина буласаҡ урынға түгелә. Түгелгән иҙелмәнең ҡуйы массаһы шунда уҡ төпкә ултыра һәм ер өйөмө күҙгә күренеп үҫә бара.

Бындай ер һурыусы агрегаттар Волга—Дон каналының үҙендә лә эшләйҙәр. Красноармейск төҙөлөш районындағы беренсе номерҙы шлюз котлованын, каналдың Донға ҡушылған урынын ҡаҙыуҙа улар ҙур эш башҡарҙылар. Ә Цимлянск гидроузел плотинаһы өсөн ер полотноһы өйөүҙә улар айырыуса күп ҡулланыла.

Ер һурғыс снарядтарҙы эшләтеүҙә йәштәр, улар араһындағы комсомолецтар айырыуса ҙур эш күрһәттеләр. Төҙөлөштөң күренекле стахановсыһы комсомолец Григорий Грачишкиндың был эштә күрһәткән хеҙмәте иң киткес ҙур. Был өлкән прораб механизмдарҙың дөрөҫ эшләүен күҙәтә, булған етешһеҙлектәрҙе бик тиҙ бөтөрә. Уның участкаһы бөтә узел күләмендә алда бара.

Комсомолец-йәштәр экипажы хеҙмәтләндергән ер һурғыс плотина буласаҡ урынға сәғәт һайын 500 кубометр ер өйә. Уның начальнигы комсомолец Виктор Михайлов. Был агрегат бөтә эште еренә еткереп, ҙур ойошҡанлыҡ менән башҡара. Экипаждың мотористәре һәм механиктәре, багермейстер һәм электриктәре, бөтә матростары стахановсы хеҙмәттең юғары өлгөләрен күрһәтәләр.

Был күптәрҙең береһе генә. Башҡа экипаждар ҙа гидроузелды 1952 йылдың яҙына төҙөп бөтөү өсөн юғары хеҙмәт өлгөләре биреп көрәшәләр. Был ҡыҫҡа срокта ҙур плотина төҙөү өсөн механизмдар һәм ком резервтәре генә түгел, совет кешеләренең көстәре, теләктәре лә етерлек.

Һәм плотина әҙер булыр. Уның һыу ятҡылыры яғына ҡараған яғы ярты метр ҡалынлыҡ бетон плиталар менән йөҙләнәсәк. Ныҡ буласаҡ ул плотина, бик ныҡ буласаҡ. Ләкин, плотина шундай ныҡ булыуына ҡарамаҫтан, һыу баҫымының көсөн тотоп булмаҫ. Шуға күрә бында һыу бушатҡыс запас плотина төҙөлә. Оҙонлоғо 500 метр, бейеклеге 40 метр булған был плотина өсөн дә хәҙер бик күп ер эштәре башҡарылған, нигеҙ ҡоролмалары төҙөлгән.

Был плотинаның булыуы, яҙғы ташҡын һыуҙарын әрәмгә ағыҙмайынса, йыйып тотоп, уны һыуһыҙ, ҡоролоҡло райондарҙың ерҙәрен һуғарыу һәм һыу менән тәьмин итеү өсөн файҙаланыуға мөмкинлек бирәсәк.

Ростов һәм Сталинград өлкәһендәге һыуһыҙ сүлдәрҙе сәскә атыусы ергә, йәшел баҡсаларға әйләндереүҙең грандиоз бурыстарын тормошҡа ашырыу өсөн Совет хөкүмәте үҙенең ҡарарында Дон магистраль каналын төҙөүҙе лә билдәләгәйне. Был каналға һыу Дон диңгеҙенән һыу бушатҡыс аша алынасаҡ. Магистраль каналдың оҙонлоғо 190 километр булып, ул Пролетарский станицаһына саҡлы һуҙыла. Ә унан һыу вағыраҡ каналдар менән төрлө яҡтарға тарала. Улар араһында иң ҙурҙары булып Үрге Сал, Түбән Дон, Багаевка, Азов, Садков, Ергеней, Чир каналдары иҫәпләнәләр. Уларҙан һыу алып колхоз һәм совхоз баҫыуҙарын һуғарыу өсөн ваҡ каналдар селтәре төҙөләсәк.

Һуғарыу каналдары Волга—Дон төҙөлөшө комплексындағы мөһим ҡоролмалар булып торалар. Уларҙы төҙөү эштәре лә бөтә киңлегенә йәйелдерелгән. Бында ла, башҡа участкаларҙағы кеүек, ҡеүәтле экскаваторҙар эшләй. Бөтә төр кәрәкле техника бар. Күптән түгел генә бында сүмесенә 14 кубометр ер һыйышлы атлаусы ҙур экскаваторҙың икенсеһе монтажланып бөттө. Уның йәш экипажы инженер-электрик Мазуров иптәш етәкселегендә Дон магистраль каналын ҡаҙырға тотондо.

Был урындарҙа бик ҙур төҙөлөштәр башҡарылған. Күптән түгел генә буш торған далала хәҙер Восход һәм Южный поселкалары үҫеп сыҡты. Электр линиялары һуҙылды, тимер юлдар уҙғарылды.

Бөгөнгө көндәге эштең иң ҙур күләме бында Дон магистраль каналын төҙөүгә тура килә. Ул тауҙа Дондың һул яҡ тигеҙлеге менән килә лә, 28-се километрҙа ҡапыл ғына копьякҡа бороло, бейек ҡалҡыулыҡҡа килеп терәлә. Ә Дон һыуы, бында туҡталып ҡалмайынса, Сал далаларын һуғарыу өсөн ары китергә тейеш. Шуға күрә лә уның юлы бында ҡыҙыҡ. Ул тоннель трассаһы менән ер аҫтынан үтеп, Сал йылғаһына килеп сығасаҡ һәм һай һыулы Сал йылғаһын киргә ҡыуасаҡ.

Тоннель төҙөү өсөн бик күп эштәр башҡарырға кәрәк. Ер эштәре лә, бетон эштәре лә етерлек. Суйын тюбингеларе генә лә бында 75 мең тонна һалынасаҡ. Күләме ярыған ҙур, срогы менән бик ҡыҫҡа булған бындай төҙөлөштә тарих бик аҙ белә. Ләкин унда эшләгән Мәскәү метроһын төҙөүселәр коллективының гүзәл хеҙмәте был төҙөлөштә лә ҙур еңеү буласағын асыҡ күрһәтә.

Тоннель төҙөлөп бөтөү менән Дондың ялтырап торған зәңгәр һыуы Сал далаларына ағып, һәр йыл һайын ураланған, йөҙәрләгән гектар ерҙе һуғарырлыҡ каналдар селтәре эксплуатацияға бирелеп торасаҡ. Бөтәһе 700 мең гектар ер һуғарылырға, ике миллион гектар ер һыу менән тәьмин ителергә тейеш. Ул ерҙәрҙә бойҙай баҫыуҙары һәм мамыҡ плантациялары, фрукты баҡсалары булыр, һыу менән тәьмин ителгән туғайҙарҙа малдар уйнаҡлап йөрөр, яңы поселкалар, ауылдар барлыҡҡа килер...

Былар хыял ғына түгел. Ә яҡты хыялдың күҙгә күренеп тормошҡа ашыуы, тормошта гәүҙәләнеше. Киләһе йылда уҡ һыу менән тултырылған Волга—Дон каналынан үткән тәүге теплоход үҙенең көслө гудок тауыштары менән тын далаларҙы яңғыратыр. Советтар иленең ҡыҙыл флагы уның матчында елберҙәп, тирә-яҡҡа нур бирер. Теплоход, Мәскәү һәм Ленинград кешеләрен, Волга буйы эшселәрен, Башҡортостан хеҙмәтсәндәрен ултыртып, каналдағы бөтә шлюздарҙы үтер һәм тын Донда барлыҡҡа килгән яңы диңгеҙҙән Ростовҡа табан йөҙөр.

Волга—Дон каналы, үҙенең масштабы уйланылышы менән коммунизмдең башҡа төҙөлөштәре кеүек, Сталин эпоҡаһының бөйөк ҡоролмаһы булып тора. Уны төҙөү — халыҡтың бик күптәнге татлы хыялдарын тормошҡа ашырыу ул.

Ғ. Ибраһимов,
(махсус хәбәрсебеҙ).
Цимлянский станицаһы.

Яңы урожай игенен ҡабул итеүгә техник базаларҙы ваҡытында әҙерләргә

Совет хөкүмәтенең, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең һәм иптәш Сталиндең үҙенең көндәлек хәстәрлек күреүҙәре һөҙөмтәһендә республикабыҙҙың ауыл хужалығы байтаҡ уңыштарға өлгәште. Республикабыҙҙың колхоздары һәм совхоздары үҙған йыл мул урожай үҫтерҙеләр, государствоға иген тапшырыу планын срогынан алда үтәнеләр. 1949 йыл менән сағыштырғанда, былтыр государствоға 18 миллион бот иген күберәк тапшырылды. Колхоздар 1951 йыл өсөн үҙҙәрен сәсеү орлоҡтары менән тулыһынса тәьмин иттеләр.

Стәрлетамаҡ, Өфө, Әбйәлил, Бишбүләк, Миәкә, Федоровка, Хәйбулла һәм Стәрлебаш райондары, республиканың башҡа райондарына ҡарағанда, иген әҙерләүҙе айырыуса яҡшы ойоштороҙолар. Был райондарҙың колхоздары государство планын байтаҡ арттырып үтәнеләр.

Иген әҙерләү осоронда өлгәшеүҙәр менән бер рәттән, етешһеҙлектәр ҙә булды. Заготзерноның Башҡортостан өлкә конторһы һәм уның эшке пункттары, урындағы базалары, государствоға иген тапшырыу осоронда тиҙ һәм оператив эшләүҙе тәьмин итмәнеләр, игендәрҙе һаҡлау сараларын тейешенсә ойошторолманы. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ элеваторы (директоры иптәш Ильясов, сифат буйынса директор урынбаҫары иптәш Хлебников) колхоздарҙан һәм совхоздарҙан иген ҡабул итеүҙе урожай йыйнауҙың тәүге көндәренән үк ойоштора алманы. Государствоға тапшырылған иген бында келәттәргә планһыҙ рәүештә һалынды, Элеватор дымлы иген менән тултырылды. Һөҙөмтәлә элеваторҙың тейәү һәм бушатыу механизмдары тулы ҡеүәтендә эшләй алманылар. Уның етәкселәре урожай йыйнауҙың тәүге көндәрендә эш менән оператив етәкселек итә алманылар, ашыҡтылар, шау-шыулы планһыҙ эшкә юл ҡуйҙылар. Ошондай ойошмағанлыҡ арҡаһында элеватор янында йөҙәрләгән машиналар, ылауҙар унар сәғәт буйына нәүбәт көтөп торҙолар. Иглин, Ҡарлыман, Приют, Мәләүез һәм башҡа ҡайһы бер пункттарҙа ла шундай уҡ хәл булды.

Колхоздарҙан һәм совхоздарҙан иген ҡабул иткәндә Продукттар резерве министерствоһының Дүртөйлө, Сулея, Яңауыл, Раевка һәм Аксен базалары айырыуса насар эшләнеләр. Бында иген тейәп килгән машиналар унар сәғәтләп кенә түгел, тәүлектәр буйына простой яһарға мәжбүр булдылар. Бөтә был етешһеҙлектәрҙе булдырмағанда, үҙған йыл республикала государствоға иген тапшырыу эше тағы ла ҡыҙыуыраҡ темп менән барған булыр ине. Бындай ойошмағанлыҡ әҙерләүҙәр пункттарының яңы урожай игенен ҡабул итеүгә насар әҙерләнеүҙәре арҡаһында ғына барлыҡҡа килде. Заготзерно пункттарының һәм базаларының иген әҙерләү осоронда насар әҙерләнеүҙәре арҡаһында былтыр күп кенә урындарҙа эшке пункттар асырға, иген ҡабул итер өсөн ҡулайлаштырылмаған келәттәргә иген ҡабул итергә тура килде.

Насар ҡулайлаштырылған келәттәргә ҡабул итеү государство игенен боҙоу факттарына юл ҡуйҙы. Ҡайһы бер урындарҙа игендә һаҡлау өҫтөнән контроль йомшаҡ булды, боҙола башлаған игендәрҙе киптереү һәм таҙартыу эштәре үҙ ваҡытында ойошторолманы. Бына ошо сәбәптәр арҡаһында Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Иглин, Ҡарлыман, Приют һәм башҡа пункттарҙа байтаҡ иген боҙолдо.

Бөтә был үткән йылғы етешһеҙлектәрҙе быйыл булдырмаҫ өсөн Заготзерно пункттарының элеваторҙарының, базаларҙың етәкселәре, партия, совет органдары, бигерәк тә Әҙерләүҙәр министерствоһы системаһы работниктәре 1951 йылдың яңы урожайын ҡабул итеүгә техник базаларҙы әҙерләү эшенә айырыуса иғтибар итергә тейештәр.

Был бурыс шунан тора, 1 августҡа тиклем 110 мең тонна иген һыйҙырышлы келәттәр, ҡеүәтле 3 киптергес кәрәк. Ләкин яңы төҙөлөштәр әле һис тә ҡәнәғәтләнмәҫлек бара. План буйынса билдәләнгән 38 яңы склад төҙөү эше тик 28 урында ғына башланған, ә Илеш, Куприяненко, Әлшәй, Бәрә, Иглин райондарында төҙөлөш эштәре бөтөнләй башланмаған. Һаҙабай, Благовар, Иәрмәкәй һәм Бөрйән райондарында ла төҙөлөш эштәренә серьез иғтибар бирелмәй.

Төҙөлөш урындары үҙәкләштерелгән тәртиптә алына торған материалдар менән тәьмин ителгәнләр, ләкин урындағы материалдар — таш, әзбиз, ҡырсын таш, ҡом һәм башҡа материалдарҙы насар әҙерләнә. Төҙөлөштәр талап ителгән эшсе көстәр менән тәьмин ителмәгәндәр. Әҙерләүҙәр министерствоһының күп кенә райондарҙағы вәкилдәре, Заготзерно пункттарының директорҙары яңы келәттәрҙе билдәләнгән сроктарҙа төҙөүҙе тәьмин итер өсөн тейешле саралар күрмәйҙәр.

Был етәксе работниктәр төҙөлөштәрҙең әһәмиәтен аңлап еткермәйҙәр булһа кәрәк. Ләкин шуны онотоорға ярамай, яңы төҙөлөштәрҙе эксплуатацияға бирмәй торон, быйыл иген әҙерләү эшен урожай йыйнауҙың тәүге көндәренән үк бөтә киңлеге менән йәйелдереү мөмкин түгел. Бына шуға күрә ваҡытты бушҡа уҙғармайынса, һис кисекмәҫтән төҙөлөштәрҙең эш графигын төҙөргә, уларҙы квалификациялы эшсе көстәре, төҙөлөш материалдары менән тәьмин итергә, таш, ҡом, ҡырсын таш, әзбиз һәм башҡа урындағы материалдарҙы ташыу эшен киң ойошторорға кәрәк.

Яңы келәттәр төҙөүҙән тыш Заготзерно линияһы буйынса бер элеваторға, механизациялаштырылған 8 складҡа, 85 иген келәтенә, 9 иген киптергескә капиталь ремонт үткәрергә, 6 элеваторға, механизациялаштырылған 12 складҡа, 217 иген келәтенә, 33 иген киптергесенә ағымдағы ремонт үткәрергә кәрәк. Әлегә тиклем ремонт эштәре лә бик ауырын темп менән бара. Элеваторҙарҙы ремонтлау эше 3,4 процентҡа, механизациялаштырылған складтарҙы ремонтлау 32,1, иген киптергестәрҙе ремонтлау 21, ә бөтә ремонт эштәре ни бары 18,9 процентҡа ғына үтәлгән.

Заготзерно линияһы буйынса оборудованиеларға һәм инвентарҙарға ҙур күләмдә ремонт эштәре үткәреү талап ителә. Ләкин шуны әйтергә кәрәк, бында ла бик күп мөһим детальдар буйынса ремонт насар алып барыла. Мәҫәлән, тауар үлсәүҙәрен ремонтлау планы бөгөнгә көнгә ни бары 33 процентҡа, техник үлсәүҙәрҙе ремонтлау планы — 50, орлоҡ таҙартыу машиналарын ремонтлау — 16, дым үлсәүгестәрҙе ремонтлау планы 31 процентҡа ғына үтәлгән.

Автогужевой һәм тимер юлдарын ремонтлау эштәре әле бөтөнләй башланмаған тиерлек. Двигателдәрҙе, генераторҙарҙы, динамомашиналарҙы, электр моторҙарын, транспортерҙарҙы һәм башҡа инвентарҙарҙы ремонтлау эше тамамланған тип иҫәпләнһә лә, ғәҙәттә, иген тапшырыу кампанияһы башланыу менән үк улар насар эшләй йәки бөтөнләй эшләмәй башлайҙар. Бына шуға күрә был агрегаттарҙы ремонтлауға, ремонттың сифатына айырыуса иғтибар ителергә тейеш.

Әҙерләүҙәр министерствоһының район вәкилдәре, Заготзерно пункты директорҙары, Союззаготтранс авторотаһы командирҙары техник базаларҙы әҙерләү менән бергә, эшке пункттарҙан май һәм июнь айҙарында үҙған йылғы игенде сығарып бөтөрөргә кәрәк икәнлеген дә онотоорға тейеш түгелдәр. Хәҙер бөтә автомашиналарҙы ошо эштә файҙаланырға кәрәк. Бер генә машинаның да икенсе дәрәжәлеге эшкә ҡушылыуына юл ҡуйырға ярамай.

Эшке пункттарҙан үҙған йылғы игенде сығарып, уны төп пункттар буйынса шундай иҫәп менән урынлаштырырға кәрәк, яңы урожай игене төҙөк складтарға тулыһынса урынлаштырырлыҡ булһын. Государство игененең сифаты яғынан да күҙ ҡараһы кеүек итеп һаҡлауҙы тәьмин итеү өсөн көрәшеү — мөһим бурыстарҙың береһе.

Кадрҙар менән эшләүгә айырыуса серьез иғтибар итергә кәрәк. Сөнки әҙерләүҙәр органдарындағы үткән йылғы етешһеҙлектәр кадрҙарҙы һайлап алыу сараларын баһаламау арҡаһында ла барлыҡҡа килделәр. Шуның өсөн Әҙерләүҙәр министерствоһының район вәкилдәре, пункт директорҙары партия, совет органдары менән берлектә пункттарҙы эштә яҡшы белгән, эштә һынылған кадрҙар менән комплектовать итергә тейештәр. Учет һәм сифат работниктәренең составын яңынан ҡарап сығырға кәрәк. Май, июнь айҙарында Заготзерноның бөтә пункттарында ла ҡыҫҡа сроклы курстар ойоштороп, был курстарҙа һәр бер работникҡа уның бурыстары тураһында яҡшылап аңлатылырға тейеш.

1951 йылдың яңы урожайын ҡабул итеүгә өлгәлә әҙерләнеү һәм иген әҙерләү кампанияһын уңышлы үткәреү — Әҙерләүҙәр министерствоһы работниктәренең иң мөһим бурысы. Хәҙер төҙөлөш эштәрен, ремонт сараларын тиҙләтеү иген әҙерләүҙең уңышын хәл итәсәк. Эшке пункттарҙан иген сығарыу эше яңы урожай өлгәргәнгә тиклем тамамланырға тейеш. Сөнки келәттәрҙе яңы урожай игенен ҡабул итеүгә әҙерләргә кәрәк.

Бөтә был саралар әҙерләүҙәр органдарының күп һанлы работниктәрен ошо эштәргә туплағанда ғына хәл ителәсәк. Шунан сығып Әҙерләүҙәр министерствоһының район вәкилдәре һәм пункт етәкселәре партия, комсомол, профсоюз ойошмалары менән берлектә социалистик ярышты киң йәйелдерергә, иген әҙерләү осоронда техник базаларҙы тулыһынса әҙер хәлгә килтереү өсөн көрәшергә тейештәр.

Һ. Вәлиев,
СССР Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡорт АССР-ы вәкиле.

ГЕРМАНИЯНЫ РЕМИЛИТАРИЗАЦИЯЛАУҒА ҠАРШЫ ХАЛҠТАН ҺОРАУ АЛЫУҘЫҢ ӘҺӘМИӘТЕ ТУРАҺЫНДА ВИЛЬГЕЛЬМ ПИКТЕҢ РАДИО АША СЫҒЫШЫ

БЕРЛИН, 15 май. (ТАСС). Германия Демократик Республикаһының президенте Вильгельм Пик, радио аша сығыш яһап, хәл иткес сәғәт килеп етте, был ваҡытта һәр бер ҡатын-ҡыҙ, һәр бер ир, һәр бер әсә, һәр бер егет һәм һәр бер ҡыҙ һуғыш булырға тейешме йәки тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыу өсөн бөтә сараларҙы күрергә кәрәкме, тигән мәсьәләне хәл итергә тейеш, тип белдерҙе. Пик, Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы тауыш биреүсе һәр бер кеше шуның менән тыныслыҡ өсөн тауыш бирә, тип билдәләне. Һәр бер немец туранан-тура ҡуйылған ике һорауға, немец халҡы тыныслыҡты һәм, аҙаҡ килеп, һуғыш тамамланғас алты йыл үткәндән һуң, оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыуҙы теләйме, Германия менән тыныслыҡ договорына ҡул ҡуйыуҙы теләйме, тигән һорауға асыҡ яуап бирергә тейеш, ти Пик.

Вильгельм Пик, американлылар һәм Бонн хөкүмәте ремилитаризациялау факты менән яңы һуғыш араһындағы үҙ-ара бәйләнеште кире ҡағып, герман халҡын хаталандырырға маташалар, тип күрһәтте. Һуғышҡа әҙерләнеү Көнбайыш Германияла етерлек тиҙлек асыҡтан-асыҡ алып барылмаймы ни? тип һорай Вильгельм Пик.

Унан ары ул Американың хәрби пландарын тулыһынса асыҡлаусы күп һандағы факттарҙы килтерә. Быйыл оккупацион расходтар тип аталған нәмәләр өсөн 6.595 миллион көнбайыш маркалағы сумма күҙҙә тотола, ул Көнбайыш Германия халҡы тарафынан түләнергә тейеш, шул уҡ ваҡытта ярым ғәскәри формированиеларҙы тотоуға, хәрби материалдарға һәм башҡа хәрби маҡсаттарға 5.580 миллион китә, тип күрһәтә Пик.

Унан ары Вильгельм Пик, Бонн хөкүмәтенең финанс министры халҡтан хәрби ихтыяждар өсөн алынған налогтарҙы байтаҡ арттырырға тәкдим итте, тип белдерә. Шулай итеп, тип билдәләй Пик, Көнбайыш Германияла ремилитаризациялауҙан зыян күрмәгән бер генә кеше лә юҡ. Бөгөн хәйерселек һәм мохтажлыҡ, иртәгә — юҡ ителеү һәм үлем, ти Пик. Ремилитаризация, тип белдерә ул, американлылар өсөн һуғышты аңлата. Хәҙер был, бынан 20 йыл элек яңғыраған: Гитлер — һуғыш ул, тигән иҫкәртеү кеүек үк дөрөҫ.

Ләкин хәҙер халҡ-ара хәл ҡырҡа үҙгәрҙе, тип күрһәтә Пик. Әгәр ҙә ҡайһы бер кешеләр гитлерсе һуғыш ваҡытында, һуғыш Германия өсөн алып барылды, тип хаталанып уйлай алһалар ҙа, хәҙер бындай фекерҙә булырға ярамай, сөнки һуғыштың тик Америка империализмы интерестарына гена хеҙмәт итә алыуы тулыһынса асыҡ.

Американлылар Европаны, һәм бигерәк тә Германияны, үҙ һуғыштарының беренсе дәрәжәләге фронты итеп ҡарайҙар, тип күрһәтә Пик. Аденауэр клиҡаһы үҙенең политикаһы менән немец егеттәрен Америка империалистарына пушкалар ите сифатында бирә.

Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы көрәш немец милләтен ҡотҡарыу өсөн көрәш булып тора. Бына шуға күрә лә немецтәр ремилитаризациялауға ҡаршы тауыш бирәсәктәр.

Хәл шундай серез булыу һәм бөтә немецтәр тарафынан да ҡарар ҡабул ителергә тейеш булыу айҡанлы, мин бөтә герман халҡына мөрәжәғәт итәм һәм президент Теодор Хейскә мөрәжәғәт итеүҙе кәрәкле тип иҫәпләйем, ти унан ары Вильгельм Пик.

Теодор Хейс әфәнде, ти Пик, һеҙ постҡа ултырып, бөтә көсөгөҙҙө герман халҡының яҡшы йәшәүе өсөн ҡулланырға һәм уға бәләләр килтермәҫкә һүҙ бирҙегеҙ. Мин, һуғыш—иң ҙур бәлә, һәм ул герман халҡына янай, тип иҫәпләйем. Һеҙгә, минең кеүек үк, герман халҡы алдында бик ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелгән. Герман халҡына килгән бәләне булдырмаҫ өсөн мөмкинлек бар. Бының өсөн һеҙ халҡтан һорау алыуҙы тыйыуҙы юҡҡа сығарырға тейешһегеҙ. Ул тыйыу конституцияға ҡапма-ҡаршы килә. Һеҙ герман халҡы ремилитаризация дошманы булып торамы һәм 1951 йылда уҡ Германия менән тыныслыҡ договорына ҡул ҡуйыу яҡлымы йәки уға ҡаршы сығыш яһаймы икәнлеген тотҡарһыҙ белдереү өсөн уға мөмкинлек бирергә тейешһегеҙ.

Вильгельм Пик, Германия Демократик Республикаһы һәм Халҡ палатаһы хәрби ҡуҙғыныстарҙы булдырмауға хеҙмәт итеүсе һәм Германияның берҙәмлеген аяҡҡа баҫтырыуға йүнәлдерелгән бөтә сараларҙы ҡабул итергә әҙер тороуҙары тураһында бер нисә тапҡыр белдерҙеләр, тип күрһәтә. Илде оккупацион ғәскәрҙәрҙән азат итеү һәм уның милли бойондороҡһоҙлоғона булышлыҡ итеү өсөн улар бөтә нәмәне эшләргә әҙерҙәр.

Вильгельм Пик, 3, 4, һәм 5 июндә бөтә немецтәр ҙә халҡтан һорау алған ваҡытта «әйе» тип әйтерҙәр, тип ышаныс белдерҙе.

Хәҙерге ватандаштарым, ти унан ары Пик, һеҙ ремилитаризациялауға ҡырҡа ҡаршы сығырға, 1951 йылда уҡ Германия менән тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн сығыш яһарға тейешһегеҙ. Бонн политиктәре һеҙҙе, ремилитаризациялау кәрәк, сөнки Советтар Союзы Германияға һәм тыныслыҡҡа янай, Советтар Союзы Германияға һөжүм итергә теләй, тип ышандыралар. Был—үҙенә тиңдәше булмаған ялғанлыҡ һәм халҡты алдау.

Советтар Союзының уйҙырма янауын раҫлаусы бер ниндәй ҙә иҫбатлауҙар юҡ. Советтар Союзының тыныслыҡтың бөйөк лагерена етәкселек итеүе, тыныслыҡ өсөн, тыныслыҡ договоры өсөн, Германияның милли берҙәмлеген һәм суверенитетын аяҡҡа баҫтырыу өсөн көрәштә герман халҡына Советтар Союзының бөтә төр ярҙамды күрһәтеүен һәр бер кеше белә. Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының Париждағы конференцияһында совет вәкиленең позицияһы быны асыҡ иҫбатлау булып тора.

Көнбайыш Германиялағы хәҙерге ватандаштарым! Мин һеҙгә бөтә серьезлыҡ менән мөрәжәғәт итәм, сөнки мине американлылар тарафынан әҙерләнгән һуғыш ҡуҙғынысы быны эшләргә мәжбүр итә. Американлылар был һуғышҡа ентекле әҙерлек алып баралар. Американың верховный комиссары Макклой Көнбайыш Германия политиктәрен Шуман планы тураһындағы договорға бер һүҙһеҙ ҡул ҡуйырға мәжбүр итте, һөҙөмтәлә күмергә һәм ҡороҫҡа Германияның суверенный хоҡуҡтары Американың ҡоралланыу программаһын үтәү өсөн аяҡ аҫтына һалып тапталалар. Америка империалистары бөтә средстволар менән—хәрби, политик һәм финанс баҫымы яһау юлы менән—Көнбайыш Германияның политик һәм хужалыҡ тормошон үҙҙәренең бөтә донъяла хакимлек итеүҙе яулап алыу пландарына буйһондоралар. Был пландарҙы үтәү өсөн герман йәштәре ҡан ҡойорға һәм үлергә, ә Германия хәрби хәрәкәттәр театрына әйләнергә һәм атом бомбалары менән бомбаға тотолоуға дусар ителергә тейеш. Беҙҙең халҡыбыҙ был һәләкәтте юҡҡа сығарырға тейеш һәм юҡҡа сығара ала.

Унан ары Вильгельм Пик социал-демократик партия члендәренә мөрәжәғәт итә һәм уларҙы үҙҙәрен хаталандырырға Шумахергә мөмкинлек бирмәҫкә саҡыра. Шумахер Аденауэрҙең экономик политикаһына һәм Шуман планына ҡарата уйҙырма ҡаршы тороу менән бер рәттән Германия Демократик Республикаһына, Советтар Союзына ҡаршы тотҡарһыҙ пропаганда алып бара һәм Одер-Нейсе линияһы буйлап үтеүсе сиккә ҡаршы, немец эшселәр хәрәкәтенең берҙәмлегенә, халҡтан һорау алыуға ҡаршы пропаганда алып бара, тип билдәләй Пик.

Хәҙерге ватандаштарым, ти йомғаҡлау һүҙендә Пик. Һүҙ беҙҙең тыуған илебеҙҙе ҡот осҡос һәләкәттән ҡотҡарыу тураһында, уны Корея яҙмышынан ҡотҡарып алып ҡалыу тураһында бара. Илебеҙҙе ҡотҡарыу бурысы беҙҙе бөтә политик һәм дини ҡаршылыҡтарҙы артҡы планға ҡуйырға мәжбүр итә. Һүҙҙең беҙҙең йәшәүебеҙ тураһында, беҙҙең ҡатындарыбыҙҙың һәм балаларыбыҙҙың йәшәүе тураһында, тыуған илебеҙҙең киләсәге тураһында барыуын һәр бер кеше аңларға тейеш. Быны аңлап, һәр бер кеше халҡтан һорау алыуҙы берҙәм Германия ватанының иркле һәм тыныс киләсәге өсөн ҡеүәтле демонстрацияға әүерелдереү өсөн бөтә нәмәне эшләргә тейеш.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 15 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 15 майҙа СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәренең урынбаҫарҙары үҙҙәренең 52-се ултырышына йыйналдылар.

Совет вәкиле 14 майҙағы ултырышта һуңғы булып сығыш яһаһа ла һәм сират көнбайыш державаларҙың вәкилдәрендә булһа ла, көнбайыш державалар вәкилдәренең береһе лә һүҙ алырға теләмәне.

Председателлек итеүсе АҠШ вәкиле Джессеп тәкдиме буйынса ултырыш ябылды.

* * *

ПАРИЖ, 16 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары әҙерлек кәңәшмәһенең 16 майҙа булған 53-сө ултырышында Франция вәкиле Пароди председателлек итте.

16 майҙағы ултырышта ла көнбайыш державаларҙың вәкилдәре үҙ позицияларын яҡлап бер нәмә лә әйтә алманылар. Улар көн тәртибе буйынса үҙ тәкдимдәренә ҡаршы совет делегацияһы тарафынан килтерелгән законлы һәм тулыһынса нигеҙләнгән дәлилдәр менән аҙ ғына ла иҫәпләшергә теләмәнеләр. Великобритания вәкиле Дэвис, мин «бер ниндәй ҙә яңылыҡ әйтә алмайым», тип белдереп, көн тәртибенең үҙ делегация тәкдим иткән үҙ вариантын яҡлап яһалған үҙенең элекке сығыштарын тулыһынса тиерлек ҡабатланы. Был варианттарға ҡарата совет делегацияһының үҙ позицияһын әйтеүенә алдан уйланылған ниәт менән иғтибар бирмәйенсә, Дэвис, «совет делегацияһы был тәкдимдәрҙең береһен ҡабул итә алмаймы икән», тип һораны.

СССР вәкиле Громыко Англия вәкиленең тупаҫ маневрын фаш итте.

— Дэвис биргән һорауҙар, — тине Громыко, — яуап талап итеүсе һорау булып тормайҙар, сөнки совет делегацияһы тарафынан яһалған белдереүҙәрҙә көнбайыш державалар тәкдимдәренең бөтә үҙ варианттары, атап әйткәндә «А», «В» һәм «С» варианттарына ҡарата уның позицияһы әйтелгәйне инде.

— Совет делегацияһы тарафынан әйтелгәндәргә, уның позицияһы Дэвискә аңлайышлы булһын өсөн, тағы ла нәмәләр өҫтәргә кәрәк булыуы тураһында уйлағанда, — тине йомғаҡлау һүҙендә Громыко, — мин беҙҙең позициябыҙ буйынса ниндәй ҙә булһа өҫтәмә аңлатыуҙар кәрәк булырмы икән, тигән һығымтаға киләм. Эш, күрәһең, был позицияның «асыҡ» булыуында түгел, ә үҙ держава делегацияһының көн тәртибенең улар тарафынан индерелгән һәм СССР делегацияһы өсөн ҡабул ителерлек булмаған үҙ вариантының береһен совет делегацияһының нисек кенә булһа ла ҡабул итеүен теләүенән тора.

Дэвис икенсе тапҡыр сығыш яһап, Атлантик Пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы пунктты хатта килешелмәгән көйөнсә лә көн тәртибенә индереү менән көнбайыш державалар делегациялары риза түгелдәр, тип яңынан ҡабатланы.

АҠШ вәкиле Джессеп үҙенең сығышында шулай уҡ был мәсьәләне ситләтеп үтте. Атлантик Пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы пунктты министрҙәр Советына тапшырыуҙан үҙ делегацияның баш тартыуын һәм Германияны демилитаризациялау тураһындағы пунктҡа был мөһим проблеманың әһәмиәтенә ярашлы булған урынды биреүҙән баш тартыуын яҡлап, Джессеп көнбайыш державаларҙың министрҙәр Советы сессияһын саҡырыуҙы ғөмүмән теләүҙәренә ҡарата совет делегацияһы тарафынан әйтелгән шикләнеүҙәрҙең тулы нигеҙлелеген шуның менән тағы ла бер тапҡыр раҫланы.

Джессеп һәм Дэвис белдереүҙәренә бер нәмә лә өҫтәмәгән Пародиҙың сығышынан һуң ултырыш ябылды.

Австрия коммунистар партияһының председателе Копленигкә 60 йәш тулды

ВЕНА, 15 май. (ТАСС). 15 майҙа Австрияның прогрессив общественносе Австрияның коммунистар партияһы (КПА) председателе Иоганн Копленигтең тыуыуына 60 йәш тулыуҙы билдәләне.

Венала тантаналы ултырыш булды, унда компартияның ике меңдән артығыраҡ активисы ҡатнашты. Ултырыш президиумында—Копленг етәкселегендә Австрия коммунистар партияһының етәкселәре, шулай уҡ Венгрия хеҙмәтсәндәр партияһы, Болгария һәм Чехословакия компартиялары, Румыния эшселәр партияһы, Германияның берҙәм социалистик партияһы, Көнбайыш Германия, Италия, Испания, Греция һәм азат Триест территорияһы компартиялары делегацияларының члендәре.

Ултырышты КПА-ның Генеральный секретаре Фюрнберг асты. Ул ВКП(б) Үҙәк Комитетынан, Польша берләшкән партияһынан, Финляндия, Дания компартияларынан һәм башҡаларҙан Копленг исеменә алынған ҡотлау телеграммаларының текстарын иғлан итте.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең йыйналыусылар тарафынан рухланып ҡаршыланған телеграммаһында былай тип әйтелә:

Иптәш И. Копленигкә.

Советтар Союзы коммунистар партияһының Үҙәк Комитете һеҙгә 60 йәш тулыу көнөндә туғандарса сәләм ебәрә һәм һеҙгә һаулыҡ һәм эшегеҙҙә уңыш теләй.

Советтар Союзы коммунистар партияһының Үҙәк Комитете.

Австрия коммунистар партияһы Үҙәк Комитетенең члены Хоннер Копленигтең тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында доклад менән сыҡты. Докладсы, Копленг илебеҙ халҡының иң киң ҡатламдарында тәрән хөрмәт һәм мөхәббәт ҡаҙанды, тип билдәләне. Австрия хеҙмәтсәндәре, тине унан ары Хоннер, Копленг йөҙөндә эшселәр синыфының иң яҡшы вәкилен күрәләр.

«Копленигтең бөтә тормош юлы, — тине йомғаҡлау һүҙендә Хоннер, — беҙҙең партиябыҙҙың үҫеше менән өҙөлөкһөҙ бәйләнгән. Был, фашизмға ҡаршы, демократия өсөн, хеҙмәтсәндәрҙе эксплуатациялауға ҡаршы, уларҙың экономик хоҡуҡтары өсөн көрәш юлы булды. Был, беҙҙең партиябыҙҙы нығытыу юлы, марксизм-ленинизм уҡыуһы нигеҙендә уның члендәренең идеологик кимәлен даими күтәреү юлы булды. Был — азатлыҡҡа һәм бойондороҡһоҙлоҡҡа юл, ныҡлы тыныслыҡҡа һәм илдең прогресына юл».

Копленг үҙенең яуап һүҙендә компартияны нығытыу өсөн, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең гениаль юлбашсыһы иптәш Сталин етәкселегендәге бөйөк Советтар Союзы ярҙамында тыныслыҡ, прогресс һәм социализм эшенең тантанаһы өсөн көрәшкә артабан да бөтә көсөн бирәсәгенә ышандырҙы.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 16 май. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһе 16 майҙа, бөтә фронттарҙа ла 38-се параллелдән көньяҡтараҡ Халҡ армияһының частәре, Ҡытай добровольцтарының частәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, дошман аталарының уңышлы кире ҡаҡтылар һәм уға йәнле көстә һәм техникала ҙур юғалтыуҙар яһанылар, тип хәбәр итте.

Германия проблемаһын тыныс юл менән хәл итеү өсөн көрәштең халҡ-ара конференцияһында

ПАРИЖ, 15 май. (ТАСС). Германия проблемаһын тыныс юл менән хәл итеү өсөн көрәштең халҡ-ара конференцияһының 14 майҙа Парижда йомғаҡлау ултырышы булды. Конференция адресына төрлө илдәрҙән 20-гә яҡын ҡотлау хаты алынды.

Франция делегаттары Пьер Биллон, генерал Пети һәм башҡалар Көнбайыш Германияны ремилитаризациялауҙы үткәргән һуғыш тоҡандырыусыларҙы фаш итеүсе асыҡ телмәрҙәр менән сығыш яһанылар. Пьер Биллон үҙ сығышында «Һуғыш теләмәүсе бөтә кешеләрҙең берләшеүенең бик кәрәк булыуын» билдәләне.

Швейцария яҙыусыһы Бувар тәкдиме буйынса конференция бер тауыштан белдереү тексын ҡабул итте. Унда, айырым алғанда, былай тип әйтелә:

Европаны яҡлау һылтауы аҫтында Көнбайыш Германияны ҡоралландырыу халҡтарҙы алдау булып тора. Конференция Көнбайыш Германияны ҡоралландырыуға ҡаршы немец халҡының һәм донъялағы бөтә халҡтарҙың көрәшен тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ залогы итеп ҡотлай. Көнбайыш Германияны демилитаризациялау өсөн бөтә илдәрҙә үткәрелгән көрәш бер үк ваҡытта был илдәрҙең һәр береһенең үҙенең милли бойондороҡһоҙлоғо һәм дөйөм ҡоралһыҙланыу өсөн көрәше булып тора.

Конференция үҙ эшенең аҙағында күп кенә резолюциялар ҡабул итте, уларҙа делегаттар:

беренсенән, дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенә үҙ тәкдимдәрен индерергә йөкләмә алалар;

икенсенән, Көнбайыш һәм Көнсығыш Германия вәкилдәрен «ремилитаризациялауға ҡаршы референдумға» һәм берләшеү методтарына ҡарата ике хөкүмәткә лә тапшырылырға тейеш булған тәкдимдәрҙе эшләү өсөн осрашырға саҡыралар;

өсөнсөнән, Европала солидарлыҡты нығытыу маҡсаттарында Германия сиктәрендә немецтәрҙең һәм күршеләге илдәр халҡтарының ҙур халҡ манифестацияларын ойоштороға тәкдим итәләр;

дүртенсенән, Германия проблемаһы буйынса һәр бер илдә дискуссия ойоштороу кәрәклеген билдәләйҙәр.

Тыныслыҡ пакты өсөн!

ФИНЛЯНДИЯ

ХЕЛЬСИНКИ, 16 май. (ТАСС). Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә йыйналған ҡултамғаларының һаны Финляндияла көн һайын арта бара. 15 майға илдә 156.691 ҡултамға йыйналды. Ҡултамғалары йыйнау дауам итә.

Бер үк ваҡытта Финляндия хеҙмәтсәндәре һуғыш пропагандаһына ҡаршы хөкүмәттең ҡырҡа саралар ҡабул итеүен һәм сейм ҡарамағына тыныслыҡты яҡлау тураһында закон проектын индереүен талап итеүҙе дауам иттерәләр.

ГОЛЛАНДИЯ

ГААГА, 16 май. (ТАСС). Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Голландияла ҡултамғалар йыйнау дауам итә. «Де ваархейд» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, уҙған ике аҙна эсендә 75.208 ҡултамға йыйылған.

Көнбайыш Германия президенте халҡтан һорау алыуҙы тыйыуҙы раҫлаған

БЕРЛИН, 16 май. (ТАСС). Хәбәр ителгәненсә, Германия демократик республикаһының президенте Вильгельм Пик 15 майҙа радио аша яһаған телмәрендә Көнбайыш Германия президенте Хейсте Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда Германия менән тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн халҡтан һорау алыуҙы тыйыуҙы юҡҡа сығарырға саҡырғайны.

Гамбург радиоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 16 майҙа Хейс белдереү яһаған, был белдереү немец халҡының берҙәм талабын тыңлауҙан Хейстең баш тартыуын күрһәтә. Хейс халҡтан һорау алыуҙы тыйыуға ҡушылған.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Картофты квадрат тәртибендә оялап ултыртыу

Картоф — күп көс һалыуҙы талап итеүсе культура. Ғәҙәттәге ысул менән ултыртҡанда сәсеүлектәрҙе эшкәртеү эшен бер генә йүнәлештә механизациялаштырырға мөмкин. Рәт араларындағы ҡый үләндәре менән көрәшеү өсөн уны ҡул менән эшкәртеү талап ителә. Картоф сәсеүлектәрен тәрбиәләүгә көс һалыуҙы кәметеү һәм шул уҡ ваҡытта уның урожайлылығын күтәреү өсөн ултыртыу ысулын үҙгәртеү кәрәк.

Был мәсьәләне хәл итеүҙә Мәскәү өлкәһенең алдынғы картоф үҫтереүселәре картофты квадрат тәртибендә оялап ултыртыуҙы ҡуллана башланылар.

Ғилми-тикшеренеү һәм тәжрибә учреждениеларының мәғлүмәттәре, шулай уҡ күп колхоздарҙың, шул иҫәптән беҙҙең республикабыҙ колхоздарының эш тәжрибәләре картофты квадрат тәртибендә оялап ултыртыу ысулы ғәҙәттәге ябай ысул менән ултыртыуҙан байтаҡҡа өҫтөн икәнлеген күрһәтте.

Картофты квадрат тәртибендә оялап ултыртыу ғәҙәттәге ултыртыуҙан айырмалы, уны ике йүнәлештә лә (буй һәм арҡыры) ат һәм трактор ҡоралдары менән тәрбиәләүгә мөмкинлек бирә. Был ысул менән ултыртыу уның урожайлылығын 30—50 процентҡа күтәрә, ә уны тәрбиәләүгә көс һалыу бер гектарға 15—20 эш көнөнә кәмей.

Был, уҙған йылда Күшнаренко районы «Новая заря» колхозының, Өфө һәм Бөрө тәжрибә баҫыуҙарының, Цюрупа исемендәге совхоз ҡаршыһындағы картоф буйынса терәк пунктының эш тәжрибәләре менән раҫланды.

Картофты ошо квадрат тәртибендә оялап ултыртыу тәжрибәһе һөҙөмтәһендә, ғәҙәттәге ябай ултыртыуға ҡарағанда гектарынан 50—60-ар центнер өҫтәмә урожай алынды.

Квадрат тәртибендә оялап ултыртҡанда уның урожайлылығы: тупраҡтың оя араларын ат һәм трактор көсө менән тәрән итеп йомшартыу; сәсеүлектең ҡуйылығын һаҡлау һәм үҫемлектәрҙе дөрөҫ урынлаштырыу, шулай уҡ картофты үҙ ваҡытында тәрбиәләү эштәрен үткәреү менән тәьмин ителә. Быларҙың бөтәһе лә үҫемлектәрҙең тиҙ үҫеүенә һәм урожай биреүенә яҡшы шарттар тыуҙыра.

Урожайлылығын күтәреү, уға көс һалыуҙы кәметеү һәм был культураны эшкәртеүҙе механизациялау шарттарын яҡшыртыу маҡсатында 1951 йылдан башлап колхоздарға картофты квадрат тәртибендә оялап ултыртыуға план бирелә. Быйыл республикабыҙ колхоздары сәсеү планының 10 процент самаһы майҙанында квадрат тәртибендә оялап ултыртырға тейештәр.

Картофты квадрат тәртибендә оялап ултыртыу өсөн көҙҙән һөрөлөп ҡалдырылған һәм яҡшы ашлаған участкаларҙы алырға кәрәк. Бындай участкаларҙа квадрат тәртибендә оялап ултыртыуҙар иң яҡшы һөҙөмтәләр бирә.

Шуның өсөн, әгәр ҙә бындай участкалар көҙҙән ашланмаған булһалар, иртә яҙҙа һөрөлә торған ерҙәрҙең гектарына 20 — 25-әр тонна серегән тиреҫ, 5 — 8-әр центнер көл ашламалары сығарырға кәрәк. Бынан тыш, ултыртыу ваҡытында бер ояға: 500-әр грамм тиреҫ, 25-әр грамм ҡош тиҙәге, 25-шәр грамм көл һәм 50-шәр грамм гранулалаштырылған минераль ашламалар индерергә тәҡдим ителә.

Яҙ һөрөү артынан уҡ дымлыҡ сығып әйләнеүен булдырмау өсөн баҫыу тырматыла.

Картофты квадрат тәртибендә оялап ултыртыу өсөн махсус машиналар хәҙергә юҡ. Уны эшкәртеүҙе бер корпуслы һабаны һәм ике корпуслы трактор һабаны менән, шулай уҡ КУТС-2, 8 Б һәм КУТС-4,2 маркалы трактор культиваторҙары менән эшкәртергә мөмкин.

Картофты ошо ҡоралдар менән квадрат тәртибендә оялап ултыртыу ваҡытында баҫыуҙарҙы дөрөҫ маркеровкалау, маркер эҙҙәренең асыҡ һәм тура һыҙыҡлы булыуы ҙур әһәмиәткә эйә. Баҫыуҙы маркеровкалау алдынан маркер эҙҙәре (һыҙығы) яҡшы күренһендәр өсөн еңел каток менән тәгәрәтеп сығырға кәрәк.

Маркер беренсе тапҡыр дөрөҫ үтелгән мәяктар буйынса үтергә тейеш. Маркеровкалау ике йүнәлештә — буй һәм арҡырыға үткәрелә. Трактор һабаны менән ултыртҡан ваҡытта маркер һыҙыҡтарының араһы 70-шәр сантиметр, ат һабаны менән ултыртҡанда 60-ар сантиметр булырға тейеш.

Ул дөрөҫ маркер һыҙығы буйынса үткәрелгән бураҙна аша һабан эҙе артынан бураҙнаның йомшаҡ яғына ултыртыла. Картофтарҙы бураҙнаның йомшартылған яғына һалып, тупраҡҡа күмдереп китергә кәрәк, юҡһа уның бураҙна төбөнә төшөп ат аяҡтары менән иҙелеүҙәре мөмкин.

Картоф ултыртыу тамамланғанда һуң тупраҡтағы дымдың парланыуын кәметеү өсөн баҫыуҙы тырматырға кәрәк.

Картофты трактор һабаны менән ултыртҡанда баҫыу һабан ыңғайына арҡыры йүнәлештә генә маркеровкалана. Тракторҙың тәүге үтеүе шулай уҡ билдәләнгән тура һыҙыҡ буйынса үткәрелә. Һабан алымының киңлеге 70 сантиметрға билдәләнергә тейеш, был ваҡытта һабандың бер корпусы 40 сантиметр, икенсеһе 30 сантиметр киңлектә алырға тейеш. Ат һабаны менән ултыртҡандағы кеүек үк картоф маркер һыҙығына ҡаршы һалынып күмдерелә.

Квадрат тәртибендә оялап ултыртыу — бигерәк тә эреләтелгән колхоздарҙың картоф сәсеүлектәренең ҙур күләмдәге майҙандарына бик кәрәкле һәм перспективалы булып һаналған яңы агротехник алым ул. Бында механизациялаштырыу мәсьәләһе хәл иткес әһәмиәткә эйә булып тора.

Шуға күрә, был эш агротехника күрһәтмәләренә ярашлы ҡаты тәртиптә һәм юғары сифатлы итеп башҡарылырға тейеш. Картоф ултыртыуҙың айырыуса эффектлы булған был ысулын республикабыҙҙың бөтә колхоздарында ла ҡулланырға кәрәк.

М. Суслов,
БАССР Ауыл хужалығы министрлығының емеш-йәшелсә бүлеге начальнигы.

Фән һәм производство работниктәренең ғилми конференцияһы

Ошо көндәрҙә Өфө авиация институтында фән һәм производство работниктәренең ғилми-производство конференцияһы булды. Конференцияла республикабыҙҙың промышленносе вәкилдәре ҡатнашты. Унда фән һәм производство работниктәренең ижади бәйләнештә булған бурыстары тураһында Башпрофсовет секретаре Фокин, авиация институтының ижади бәйләнеш буйынса тәжрибәһе тураһында институт директоры Емелин, яңы техниканы файҙаланыу тураһында «Башнефть» берекмәһенең баш инженеры Байрак һәм башҡа иптәштәрҙең докладтары тыңланды.

Докладтан һуң металлургия, машиналар төҙөү, металл эшкәртеү, нефть, химия, еңел, аҙыҡ, урындағы һәм урман промышленностәре, энергетика, төҙөлөш, транспорт буйынса секциялар эшләне. Секцияларҙа оборудованиеларҙы файҙаланыу, яңы техника индереү буйынса сығыштар булды. Шулай уҡ конкрет саралар билдәләнде.

Секцияларҙың эше конференцияла тикшерелде. Һәр секция буйынса конкрет ҡарарҙар ҡабул ителде.

З. Фәттәхов.

Металл ватыҡтары йыйнау

Учалы. Район сауҙа работниктәре промышленность өсөн металл ватыҡтары йыйнайҙар. Ошо йылдың беренсе кварталында район буйынса 34 тоннанан артығыраҡ металл ватыҡтары йыйнап тапшырылды.

Был эштә иптәш Хәсәнов етәкселек иткән Учалы сельпоһы айырыуса активлек күрһәтә. Сельпо работниктәре беренсе кварталда 19 тонна ҡара металл ватыҡтары йыйнап тапшырҙылар.

Металл ватыҡтары йыйнауҙа сауҙа работниктәренә Учалы машина-трактор станцияһы ла ярҙам итә. МТС беренсе кварталда 15 тонна металл йыйнап тапшырҙы һәм тағы ла 45 тонна тапшырырға йөкләмә алды.

С. Янгиров.

Мәктәптең колхозға шефлығы

Бәләбәй. А. А. Поскребышев исемендәге 15-се номерлы Аксаков тимер юл урта мәктәбе уҡытыусылары һәм уҡыусылары Каганович исемендәге колхозды шефҡа алдылар. Уҡыусылар был колхозға барып ике тапҡыр постановка ҡуйҙылар һәм иптәш Тамочкин «Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре», «Совет кешеһенең йөҙө» тигән темаға доклад менән сығыш яһаны.

Мәктәп работниктәренән Бабкова, Пахомова, Абрамов һәм башҡа иптәштәр шефҡа алынған колхозға ярҙам итеүҙә айырыуса актив ҡатнашалар.

И. Николаева.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт академия драма театрында— «АЛЛАН СЕМЬЯҺЫ».

Рус драма театрында — «ЛУТОНИНДӘР СЕМЬЯҺЫ».

«Октябрҙә» — ЯҢЫ БОЕЦТАР САФҠА БАҪЫР».

«Салауатта» — «МИНЕ ЕТ».

«Уралда» — «ИКЕ БОЕЦ».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа «БЕРЕНСЕ СТАРТ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Бара Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлеше һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П01970 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 97 (8814)
1951 йыл
19
МАЙ
шәмбе

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ҺУҢҒЫ КУЛЬТУРАЛАР СӘСЕҮҘЕ ҠЫҪҠА СРОКТА ҮТКӘРЕРГӘ! (1-се бит).
СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. П. Бакиров. — Ҡандра райкомында партия ойошмаларының эшенә иғтибар итмәйҙәр. (2-се бит).
В. Зюзин. — Планлы политик-агитация эшселәрҙең хеҙмәт активлектәрен күтәрә (2-се бит).
З. Ишморатов. — Производство күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн (2-се бит).
С. Сейтбатталов. — Башҡорт театрҙарының репертуарҙарын артабан яҡшыртыу өсөн (2-се бит).
СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. Р. Әминова, Е. Попова. — Дөйөм мәжбүри уҡытыуҙы тормошҡа ашырыу юлында (3-сө бит).
СОВЕТ ФӘНЕ КЕШЕЛӘРЕ. Ғ. Әхмәтшин. — Фатима Мостафина (3-сө бит).
АЛДЫНҒЫ ТӘЖРИБӘЛӘР ТРИБУНАҺЫ. В. Ғирфанов. — Тарынан юғары урожай алыу агрокомплексе (3-сө бит).
Ғ. Ғалиев. — Тракторист (3-сө бит).
ТЕАТР. Р. Хәсәнов. — Диплом спектакле (4-се бит).
БМО ГЕНЕРАЛЬНЫЙ АССАМБЛЕЯҺЫ ПОЛИТИК КОМИТЕТЕНЕҢ УЛТЫРЫШЫНДА (4-се бит).
ГЕРМАНИЯНЫ РЕМИЛИТАРИЗАЦИЯЛАУҒА ҠАРШЫ ХАЛЫҠТАН ҺОРАУ АЛЫУҘЫ ҮТКӘРЕҮ БУЙЫНСА ҮҘӘК КОМИТЕТТЕҢ МЕМОРАНДУМЫ (4-се бит).
Кореялағы ваҡиғалар (4-се бит).

Һуңғы культуралар сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәрергә!

СССР Министрҙәр Советендә

СССР Союзы Министрҙәр Советы ҡарар итте: 1951 йылда Өфө ҡалаһында тау-геология институты, агробиология институты, тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, химия һәм химия технологияһы секторы һәм экономик тикшеренеүҙәр секторы составында СССР Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороға.

Совет Башҡортостанының экономикаһы һәм культураһының артабан сәскә атыуы өсөн

Республикабыҙ хеҙмәтсәндәре бөтә совет халҡы менән берлектә илебеҙҙә коммунистик общество төҙөү эшендә актив ҡатнаша. Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә, бөйөк рус халҡының туғандарса ярҙамында һәм барлыҡ прогрессив кешелектең гениһе Иосиф Виссарионович Сталиндең көндәлек һәм атайҙарса хәстәрлеге менән совет Башҡортостаны илебеҙҙең эре индустриаль райондарының береһе булып әүерелде. Башҡортостан юғары уҡыу йорттары һәм урта мәктәптәр, техникумдар селтәре менән солғап алынған, формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культура сәскә атты.

Тик Ленин — Сталин партияһы ғына, бөйөк Октябрь социалистик революцияһы ғына Башҡортостан халыҡтарын батша самодержавиеһының һәм урындағы феодалдарҙың, муллаларҙың, попҡарҙың ҡоллоғонан ҡотҡарҙы һәм Башҡортостан халҡына экономик яҡтан һәм культура кимәле яғынан үҫешкә киң юл асты. Башҡорт халҡы коммунистар партияһы етәкселегендә һәм оло туғаныбыҙ рус халҡының туғандарса ярҙамы менән социалистик үҙгәртеүҙәрҙә бик ҙур уңыштарға өлгәште.

Хәҙер Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик республикаһында нефть, машина төҙөү, химия һәм башҡа [illegible] промышленность [illegible]

[illegible]

Хәҙер бөтә капиталистик илдәрҙә фән һәм культура эксплуататорҙарға хеҙмәт итә. Күп кенә капиталистик илдәрҙең экономикаһы 40 йыл элек бер кимәлдә таптана. Капитализм етештереү көстәрен үҫтереүгә тормоз булып тора. Шуға күрә лә Францияла промышленность производствоһы буйынса хәҙер 1913 йылғы кимәлдә тора. Италияла ла, Англияла ла, Бельгияла ла һәм Латин Америкаһы илдәрендә лә эш яҡшынан түгел, бик насар. Һуңғы 20 йыл эсендә Америка Ҡушма Штаттарында етештереү кимәле уртаса алғанда ике процент самаһы ғына күтәрелде, ә Советтәр Союзында шул уҡ 20 йыл эсендә үҫеш темпы, уртаса алғанда, 20 процент тәшкил итте. Тимәк, айырыуса ҡеүәтле тип иҫәпләнгән капиталистик илдең үҫеш темпына ҡарағанда, социалистик экономиканың үҫеш темпы ун тапҡырға көслөрәк. Шуға күрә лә СССР-ҙың һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планы уңышлы үтәлде һәм арттырып үтәлде. Шул нигеҙҙә 1950 йылда СССР-ҙа промышленность продукцияһы, 1940 йылға ҡарағанда, 73 процентҡа артыҡ етештерелде, эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм крәҫтиәндәр доходтарының дөйөм суммаһы, 1940 йылға ҡарағанда, сағыштырма хаҡтарҙа 62 процентҡа артты.

Советтәр Союзының экономикаһы үҫкән һайын Башҡортостандың да экономикаһы нығый. Бөйөк рус халҡы ярҙамында республикабыҙҙа фән үҫә, искусство һәм әҙәбиәт сәскә ата. [illegible] В. И. Лениндең [illegible] 230 мең данала [illegible] И. В. Сталиндең 132 [illegible] миллион 959 мең данала [illegible] башҡорт телендә [illegible]

[illegible]

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының бөгөнгө номерендә Башҡортостанда СССР фәндәр Академияһының филиалын ойоштороу тураһында СССР Министрҙәр Советы ҡарары иғлан ителә. СССР Министрҙәр Советы «1951 йылда Өфө ҡалаһында тау геологияһы институты, агробиология институты, тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, химия һәм химия технологияһы секторы һәм экономик тикшеренеүҙәр секторы составында СССР Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороға» ҡарар итте.

СССР Министрҙәр Советының был тарихи ҡарары Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең тормошонда [illegible]

[illegible]

Башҡорт халҡына ла, Советтәр Союзының барлыҡ халыҡтары кеүек үк, фәнгә, культураға эйә булырға, ижад итергә киң юл асылған. Уны Ленин һәм Сталин етәкселегендә коммунистар партияһы асты. Шуға күрә лә башҡорт халҡы Ленин — Сталин партияһына һәм һөйөклө атайыбыҙ һәм остазыбыҙ иптәш Сталинға бурыслы. Башҡорт халҡы совет фәненең һәм культураһының артабан сәскә атыуы өсөн арыу-талыуҙы белмәй хеҙмәт итәсәк һәм ижад итәсәк.

Йәшәһен коммунистар партияһының ленинсе-сталинсе милли политикаһының тантанаһы! Бөйөк Сталинға дан!

Цюрупа исемендәге совхозда (Өфө районы) картоф ултыртыу эше ҡыҙыу бара.
Һүрәттә: (һулда) иптәш М. Маркеловтың трактор агрегаты картоф ултыртыуҙа. Был агрегат көндәлек норманы 290 процентҡа үтәй. (Уңда) тракторист иптәш Маркелов.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ярышта алған йөкләмә намыҫ менән үтәлде

Юлдыбай. (Телефон аша). Беҙҙең районды колхозсылары һәм механизаторҙары быйыл юғары урожай өсөн ярышҡа сығып, сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта яҡшы сифатлы итеп үткәрергә һүҙ биргәйнеләр.

Йөкләмә намыҫ менән үтәлде. Район тары һәм ҡара бойҙайҙан башҡа яҙғы культуралар сәсеүҙе тулыһынса тамамланы. Бөтәһе 22 мең 400 гектар майҙанда яҙғы культуралар сәселде.

«Һаҡмар», Молотов, Сталин исемендәге колхоздар баҫыу эштәрен айырыуса яҡшы үткәрҙеләр. Молотов исемендәге колхоз (председателе иптәш Шәрипов) 2 мең 800 гектар майҙанда яҙғы культуралар сәсеүҙе 10 көндә тамамланы. 300 гектар майҙанда сәсеү арҡыры-буй ысулда үткәрелде.

Был колхозда иптәш Попов етәкселек иткән трактор бригадаһы колхоз менән төҙөшкән договорҙы срогында үтәне. Бригада тракторҙары тәүлек әйләнәһенә файҙаланыу һөҙөмтәһендә баҫыу эштәрен 7 көндә үтәп сыҡты. Хәҙер был бригада бөтә көстө иртә пар һөрөүгә тупланы һәм һуңғы бер нисә көн эсендә генә 200 гектарҙан артыҡ майҙанда пар һөрөү үткәрҙе.

«Һаҡмар» колхозы ла сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта тамамлауға өлгәште. Был эштә иптәш Каразов бригадаһы колхозға ҙур ярҙам күрһәтте. Бригада ер һөрөү планын 120, сәсеү планын 135 процентҡа үтәне.

Хәҙер район колхоздарында һуңғы һәм мал аҙығы культураларын сәсеүҙе, пар һөрөүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн ныҡлы көрәш бара.

С. Рафиҡов,
ВКП(б)-ның Матрай райкомы секретаре.

Тары менән люцернаны ҡатнаштырып сәсеүҙе киң ҡулланырға

Үлән баҫыулы дөрөҫ сәсеү әйләнештәрендә бертөклө һәм ҡуҙаҡлы күп йыллыҡ үләндәр ҡушымтаһын сәсеү тупраҡтың уңдырышлылығын күтәрә һәм малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыуға ярҙам итә.

Башҡортостандың барлыҡ тупраҡ-климат зоналарында, бигерәк тә ялан райондарында, баҫыусылыҡ һәм мал аҙығы сәсеү әйләнештәрендә люцерна-житняк ҡушымтаһы сәселергә тейеш. Ләкин был эштә люцерна орлоҡтарының етмәүе бик ҙур тотҡарлыҡ яһай.

Люцерна үҙенең биологик үҙенсәлеге буйынса тәүге осорҙа бик әкрен үҫә. Ә бойҙай, һоло, арпа кеүек бертөклө культуралар шытып сыҡҡандан һуң бик тиҙ үҫеп китәләр. Шуныҡтан люцернаны бертөклө иртә культуралар менән сәскәндә, уның үҫешенә ҙур зыян килә һәм улардан юғары һәм тотороҡло орлоҡ урожайы алып булмай.

Күп кенә тәжрибәләр һәм һынауҙар тары менән люцернаны бергә ҡушып сәсеү яҡшы һөҙөмтәләр биреүен күрһәтә. Сөнки тары менән люцерна үҙҙәренең үҫеүе осоронда бер-береһенә ҡамасауламайҙар. Шулай уҡ люцернаны йәй көнө эшкәртеү өсөн өҫтәмә хеҙмәт талап ителмәй. Был эш тарының рәт араларын эшкәртеү ваҡытында үткәрелә. Башҡортостан государство селекцион станцияһында тарыны люцерна менән бергә киң рәтле ысул менән сәскәс, түбәндәге күләмдәрҙә урожай алынды:

1947 йылда тары менән люцерна ҡушымтаһы сәселгән майҙандан шул уҡ йылда тары урожайы йыйып алынды, ә икенсе йылда, йәғни 1948 йылда, һәр бер гектарҙан 4,5 центнер люцерна орлоғо урожайы алынды. 1948 йылда тары менән люцерна сәселгән 5 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 17-шәр центнер тары алынды. Шул уҡ ваҡытта тары һаламының малдар өсөн аҙыҡ булыу сифаты бик ныҡ яҡшырҙы. 1949 йылда был майҙандың һәр бер гектарынан 5-шәр центнер яҡшы сифатлы люцерна орлоғо алынды.

Люцерна орлоғонан юғары һәм тотороҡло урожай алыу өсөн был колхоздарҙа тары менән люцернаны ҡатнаштырып, киң рәтле сәсеүҙе массовый рәүештә ҡулланырға тәҡдим ителә. Бындай ҡушымтаны сәсеү тары культураһын сәсеү срогында үткәрелә. Һәр бер гектарға 4-5 килограмм люцерна һәм 14-16 килограмм тары орлоғо нормаһы алына һәм бергә ҡушыла. Сәскәс был орлоҡтарҙы бер уҡ ваҡытта сәсерлек итеп көйләнелә. Орлоҡ тупраҡҡа 3-4 сантиметр тәрәнлеккә күмдерелә. Сәсеүҙән һуң тупраҡ катоклана.

Х. Фәтҡуллин,
ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.

Мал аҙығы культуралары сәсеү планын арттырып үтәнеләр

Ҡырмыҫҡалы районының Чапаев һәм Сталин исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре общественный малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн бөтә сараларҙы күрәләр.

Чапаев исемендәге колхозда мал аҙығы культуралары сәсеү планы тулыһынса үтәлде. Бында 70 гектар майҙанда бер йыллыҡ һәм 31 гектар күп йыллыҡ үлән сәселде. Сталин исемендәге колхозда ла был эш уңышлы бара. Колхоз 60 гектар майҙанда күп йыллыҡ үлән сәсеп, планды икеләтә арттырып үтәне.

Н. Фәтҡуллина.

Һүҙебеҙ эштән айырылмай

Ҡубандең данлы механизаторы И. Бунеевтең саҡырыуына яуап итеп, беҙ сәсеүҙең тәүге көндәрендә үк смена нормаларын арттырып үтәүҙе маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Быйылғы сезонда бригада көсө менән 2800 гектар ер эшкәртергә йөкләмә алғайныҡ. Ә алдынғы трактористарыбыҙҙан В. Хәмитов һәм Ғ. Мусин иптәштәр сезонға 550-шәр гектар ер эшкәртергә һүҙ бирҙеләр. Шул уҡ ваҡытта беҙ һәр бер уныһы көндә экономияланған яғыулыҡ иҫәбенә эшләү өсөн көрәшәбеҙ.

Баҫыу эштәренең тәүге көндәрендә үк беҙ үҙебеҙҙең һүҙебеҙгә тоғро икәнлегебеҙҙе күрһәттек. Машиналар тәүлегенә 20-шәр сәғәт эшләне. Был ваҡыт эсендә трактористарҙан В. Хәмитов һәм А. Мусин иптәштәр 75 гектарға тиклем иген сәстеләр.

Был уңыш үҙлегенән килмәне, әлбиттә. Тракторҙарҙы яғыулыҡ һәм һыу менән заправить итеү бары тик бураҙналарҙа ғына үткәрелде. Бригадаға беркетелгән колхозсыларҙан А. Мусин һәм Х. Сабанчин иптәштәр өҙлөкһөҙ һыу һәм яғыулыҡ ташып торҙолар. Шулай уҡ сәскестәргә орлоҡ һалыу нигеҙҙә тракторҙарҙы туҡтатмайынса башҡарылды. Был эшкә билдәләнгән колхозсы иптәш Р. Аспаев үҙенә йөкмәтелгән бурысты намыҫ менән үтәне. Тракторҙарҙың һәм сәскестәрҙең туҡтап тороуына юл ҡуйылманы.

Механизаторҙарҙың һәм колхозсыларҙың фидакәр эшләүе арҡаһында беҙ хеҙмәтләндергән «Ағиҙел» колхозының икенсе номерлы баҫыусылыҡ бригадаһындағы 450 гектар сәсеү планы 8 көн эсендә 580 гектарға еткереп үтәлде. Шул уҡ ваҡытта беҙ 80 гектар пар һөрҙөк. Бригадала 500 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһалды. Бригадалағы һәр бер шартлы трактор менән уртаса 150 гектар ер эшкәртелде. Был йыллыҡ производство планының 40 процентын тәшкил итә. Колхоздың баҫыусылыҡ бригадаһы араһындағы тығыҙ дуҫлыҡ сәсеүҙең яҡшы сифатлы булыуын тәьмин итте. Хәҙер ҙур ойошҡанлыҡ менән һуңғы культураларҙы сәсеү бара.

Беҙ пар һөрөү планын уңышлы үтәү өсөн көрәшәбеҙ. Беҙ был эштә лә МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙ ҡулыбыҙҙа ныҡ тотабыҙ.

Х. Исмәғилов,
Йомағужа районы, Подгорный МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры.

Яровой культуралар сәсеү тамамланды

Күгәрсен районының Сталин исемендәге колхоз члендәре 2250 гектарҙан артығыраҡ майҙанда ашлыҡ сәстеләр. Бынан тыш, улар быйыл башҡа майҙанын байтаҡ киңәйттеләр. Шулай уҡ баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыуҙың йыллыҡ планы ла арттырып үтәлде.

Баҫыу эштәре нигеҙҙә тракторҙар көсө менән башҡарылды. Хәҙер бында һуңғы культуралар сәсеү, май пары һөрөү эше йәйелдерелде.

Х. Дәүләтшин.

Пар һөрөү планын арттырып үтәйбеҙ

Беҙҙең Пәнгел совхозы коллективы быйыл да юғары урожайға нигеҙ һалыу өсөн бөтә сараларҙы күрҙе.

Совхоз эшселәре социалистик ярышта алған йөкләмәләрен срогынан алда үтәү өсөн бөтә көстәрен биреп эшләнеләр. Һөрөү буйынса иртә баҫыу эштәре уҡған [illegible] күп [illegible] үткәрелде.

Хәҙер бөтә көс пар һөрөүгә, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә тупланды. Быйыл совхоз 3000 гектар майҙанда иртә пар һөрөргә тейеш. 15 майға пландың артығынан күбеһе үтәлде. Механизаторҙар государство планын 20 майға үтәп, пландан тыш 1200 гектар майҙанда иртә пар һөрөргә йөкләмә алдылар.

Н. Крыгин,
Пәнгел совхозы директоры.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА

Жданов. Рельс-балкалар цехы — «Азовсталь» заводында алдынғы цех. Цех коллективы Волга—Дон каналы өсөн заказдарҙы срогынан алда үтәй.

Һүрәттә: коммунизмдың бөйөк төҙөлештәре адресына рельстәр ебәреү.

П. Кашнель фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Рус воиндарына тарихи һәйкәлде реставрациялау

КОБРИН. (Брест өлкәһе). 1912 йылдың сентябрендә Кобринда рус ғәскәрҙәренең Наполеон армияһын еңеүенә 100 йыл тулыу хөрмәтенә һәйкәл асылғайны. Һәйкәл түбәһенә бронзанан эшләнгән бөркөт ҡуйылған гранит ҡылыс тора ине.

Беренсе бөтә донъя һуғышы ваҡытында немец оккупанттары бөркөттө урлағандар. Күптән түгел һәйкәл реставрацияланды. Бронзанан эшләнгән бөркөт ҡылыс түбәһенә яңынан ҡуйылды. Мрамор плитәгә: «Россия сиктәрендә 1812 йылдың 15 июлендә Наполеон ғәскәрҙәрен еңеүгә өлгәшкән рус воиндарына», тигән һүҙҙәр яҙылған.

Кабардыла бесән сабыу

НАЛЬЧИК. Быйылғы яҙ Кабардыла бесән сабыу эштәрен юғары механизациялау менән характерлы. Республика МТС-тарына бик күп һанда трактор бесән салҡыстары, киң алымлы трактор тырмалары һәм башҡа машиналар алынды.

79-сы номерлы йылҡысылыҡ заводында бесән йыйнауҙа агрегатлаштырыу киң ҡулланыла. Тракторист Н. Скурыгиндең 8 бесән салҡыстан комплектовать ителгән бесән йыйнау агрегатын 4 машинист хеҙмәтләндерә. Агрегат бер сменала 30 һәм унан да күберәк гектар майҙанда бесән йыйнай, был норма менән ҡуйҙа тотолғанға ҡарағанда 5 — 8 гектарға артығыраҡ. Машиналар туҡтауһыҙ эшләйҙәр, трактор, нигеҙҙә, өсөнсө тиҙлектә хәрәкәт итә, алым киңлеге 10 метр тирәлек.

Радио һөйәүселәр—конструкторҙарҙың Бөтә Союз ғилми-техник конференцияһы

Мәскәүҙә, Горький исемендәге Үҙәк культура һәм ял паркында радио һөйәүселәр — конструкторҙарҙың ДОСАРМ-дың үҙәк комитеты тарафынан саҡырылған Бөтә Союз ғилми-техник конференцияһы асылды. Конференцияла күп кенә доклалтар тыңланыласаҡ. Радио һөйәүселәр колхоздарҙы, совхоздарҙы һәм машина-трактор станцияларын радиофикациялау өлкәһендә үҙ эштәре тураһында һөйләйәсәктәр.

Харьков радио һөйәүсеһе В. С. Бовченко «Бәләкәй телевизион үҙәктәрҙе төҙөү» тигән темаға беренсе докладты яһаны.

Конференция 25 майға тиклем дауам итәсәк. (ТАСС).

Мәскәү йөк тейәү машиналарының экспериментал заводы 5 тонналы автотейәгестәр етештерә. Күптән түгел Куйбышев гидроэлектростанцияһы төҙөлөшө адресына шундай машиналар партияһы ебәрелде.

Һүрәттә: автотейәгестәрҙе һынау.

В. Токарев һәм К. Иванов фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Кандра райкомында партия ойошмаларының эшенә иғтибар итмәйҙәр

Кандра районы һуңғы ваҡытта ауыл хужалығын үҫтереүҙә ҡайһы бер уңыштарға өлгәште. Сәсеүлек майҙандары һуғарылыш тиһләмге көмәлгә еткерелде, 1950 йылда общественный малсылыҡты үҫтереү планы, төштәрҙән башҡа, бөтә төр малдар буйынса үтәлде.

Ләкин районда бер иш тиһләм тынысланып ҡалыусанлыҡ бар, бөтә резервтар ҙа һәм комбайнлектар ҙа файҙаланылмай, колхоздарҙа ауыл хужалығы культураларының урожайлылығы әле булһа түбән, игенселек культураһына кәрәкле иғтибар бирелмәй, малдарҙың продукт биреүсәнлеге түбән, МТС эшендә лә серьез етешһеҙлектәр бар. Район колхоздарында хеҙмәт дисциплинаһы насар ҡуйылған, колхоздарҙың һәм колхозсыларҙың аҡса доходтары насар үҫтерелә. Хужалыҡта өлгәшелгән уңыштар бик йомшаҡ ныҡытылалар.

Былларҙың бөтәһе лә ВКП(б) райкомының (секретары иптәш З. З. Зарипов) партия-ойоштороу һәм партия-политик эште баһалап еткермәүенән, политик эште хужалыҡ эше менән ослап бәйләмәүенән, партия ойошмаларының эшенә аҙ иғтибар биреүенән, хужалыҡ бурыстарын хәл итеү өсөн уларҙың ролен һәм яуаплылыҡтарын күтәрмәүенең һөҙөмтәһе булып торалар.

Районда партия ойошмаларына етәкселек итеүгә нигеҙҙә йәштәрҙең ҡуйылыуы характерле булып тора. Партия ойошмалары секретарҙарының 50 проценттан артығы былдан кәмерәк эшләй, ләкин райком уларға кәрәкле көндәлек ярҙамды күрһәтмәй, уларҙы тәрбиәләү менән шөғөлләнмәй һәм партия эше тәжрибәләре менән байытмай. Семинарҙар һәм кәңәшмәләр һирәк үткәрелә. Алдынғы ойошмаларҙың тәжрибәһе дөйөмләштерелмәй һәм таратылмай, секретарҙарҙың отчеттары һирәк тыңланыла, партияның төүге ойошмаларының секретарҙары менән етәксе работниктарҙың даими йәнле бәйләнеше юҡ. Шуға күрә күп кенә партия ойошмаларында партияның эске эше үҙ ағымына ҡуйылған. «Победа» колхозының партия ойошмаһында (секретары иптәш Сухалов) 20-гә яҡын коммунист бар, ләкин партия ойошмаһы хужалыҡ эшенә хәл итеүсе йоғонто яһамай, администрация эшмәкәрлегенә контролдәк итеү эшен тормошҡа ашырмай, коммунистарҙың авангардлыҡ ролен күтәрмәй. Партия ойошмаһында партияның эске эше насар хәлдә тора.

Эш планы төҙөлмәй, коммунистарға партия поручениеләре бирелмәгән, агитколлектив эшләмәй, стена газетаһы сығарылмай. Партия йыйылыштары үткәрелмәй, коммунистар членлек взностарын бер нисә айҙар буйына түләмәйҙәр.

Партия ойошмаһында кандидатлыҡ стажы үткән күп кенә коммунистар бар, ләкин уларҙың ҡайһы берҙәренең партияға ҡабул итеү тураһындағы ғаризалары 6-7 ай буйына ҡаралмайынса ята. Был ойошмала райком работниктарының береһе лә булмаһы, тип әйтеп булмай, унда Халфин һәм Терегулов иптәштәр булып киттеләр, ләкин улар ойошма эшен тикшереү һәм өйрәнеү менән ҡыҙыҡһынмағандар һәм урында бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтмәнеләр.

«Кәрәш», «Трактор», Ленин исемендәге колхоздарҙың, район связь конторһының партия ойошмаларында һәм ВКП(б) райкомының үҙендә лә эш шулай уҡ яҡшы тормай. Эш бында планлаштырылмай, йыйылыштар һирәк булалар, улар насар әҙерләнәләр һәм шуға күрә түбән кимәлдә, эштәге етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләүһеҙ һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүһеҙ үтәләр. Күп кенә коммунистарҙың партия поручениеләре юҡ, практик эштә тейешле сынығыу алмайҙар һәм үҫмәйҙәр.

Күп кенә партия ойошмаларында партия хужалығы насар хәлгә килтерелгән, коммунистарҙы учетҡа алыу эшендә тәртип юҡ, протоколдар ҡағыҙ киҫәктәренә генә яҙылалар, ә райкомдың партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлеге (бүлек мөдире иптәш Миңһажетдинова) партия ойошмаларының секретарҙарына партия хужалығында тейешле тәртип булдырыуға ярҙам күрһәтмәй. Райком работниктары партия ойошмаларының партия йыйылыштарының күп кенә протоколдарын өйрәнмәү генә һәм анализ яһамау ғына түгел, хатта уларҙы уҡымайҙар ҙа, протоколдар буйынса ойошмаларға иҫкәртеүҙәр ебәрмәйҙәр.

Район партия ойошмаларында идеологик эш йомшаҡ ойошторолған. Түңәрәктәрҙең һәм политик мәктәптәрҙең эшендә казенщина һәм формализм күп. Партия мәғарифе мәсьәләләре буйынса райком ҡарарҙар ҡабул итә, ләкин бөтә бәлә шунда, ул үҙ ҡарарҙарының үтәлешен һуңыр килеш ышана, ә ойоштороусанлыҡ эше менән шөғөлләнмәй. Һөҙөмтәлә политик мәктәптәрҙә һәм түңәрәктәрҙә уҡытыу пландары үтәлмәйҙәр, занятиелар өҙөлә, тыңлаусыларҙың занятиеларға килеүе 45—50 процент кенә тәшкил итә. Райком политик уҡыуға конкрет етәкселек итеүҙән шул тиклем алыҫлашҡан, хатта пропаганда бүлегендә был эштә бер ниндәй асыҡлыҡ та, иҫәп тә юҡ, тик айырым ойошмалар буйынса ҡайһы бер мәғлүмәттәр генә бар. Айырым түңәрәктәр программа материалын үтәүҙә серьез артта ҡалдылар, ә райком эште тикшермәйенсә планды «ҡыуып етергә» күрһәтмә бирә. Кәрәкмәгән ашығыу башлана. «Трактор» колхозының партия ойошмаһында пропагандист Тәхфәтуллин бер үк тема буйынса көн һайын тиерлек занятиелар үткәрә башланы. Был, занятиеларҙың сифатына ҙур зыян яһай.

Пропагандист — партия мәғарифендә төп фигура, ләкин ВКП(б) райкомы быны иҫәпкә алмай һәм пропагандистарға ҡанәғәтләнмәслек етәкселек итә. Һәр бер пропагандистың эшенә контроль урынлаштырылмаған, занятиелар методикаһында һәм уларҙың идея кимәлен күтәреүҙә пропагандистарға тейешле ярҙам күрһәтелмәй, тәжрибәләр менән уртаҡлашыу буйынса кәңәшмәләр практикаға индерелмәй.

Үҙ алдарына эшләүсе коммунистарҙың һисеҙ шөғөлләнеүҙәрен райком белмәй. Кәңәшмәләрҙең береһендә һәм район матбуғатында райком работниктары райпотребсоюз председателе иптәш Сәлимгәрәевте үҙ өҫтөндә яҡшы эшләгәне өсөн маҡтанылар. Ләкин ғәмәлдә иптәш Сәлимгәрәевтең бына бер йыл инде үҙ өҫтөндә бер нәмә лә эшләмәгәнлеге, марксизм-ленинизм классиктарын өйрәнмәгәнлеге, ә тик алса алынған белемдәре менән генә ҡәнәғәтләнеүе беленде.

Райкомдың серьез ғәйебе шунан тора, уның работниктары политик уҡыуға иғтибар бирмәйҙәр, уны тик өҫтән генә ҡарайҙар һәм занятиеларҙың идея йөкмәткеһе менән ҡыҙыҡһынмайҙар.

Партия ойошмаларында агитацион-массовый эште үткәреүҙә лә серьез кәмселектәр бар. Сталинград партия ойошмаһында агитаторҙар менән эшләү тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең ҡарарында, партияның төүге ойошмаларының секретарҙары агитколлективтарға үҙҙәре етәкселек итергә тейештәр, тип күрһәтелгәйне. Кандра районында был талапты үтәмәйҙәр. Партияның күп кенә ойошмаларында («Трактор», «Победа», «Игенсе» һәм башҡа колхоздар) партия ойошмаларының секретарҙары агитколлективтарға үҙҙәре етәкселек итмәйҙәр, ә был мөһим эште квалификацияһыҙ, аҙ белемле коммунистарға тапшырғандар. Тик шуға күрә генә агитацион эш бында түбән кимәлдә, колхоздар алдында торған практик бурыстарҙан айырым алып барыла, ә партия райкомы ошо иҫ киткес етешһеҙлектәрҙе күрмәй. Күп кенә ойошмаларҙа коммунистарҙың абсолют күпселеге агитацион эштән ситтә тора. «Өс ҡайын» колхозының партия ойошмаһында 15 коммунистың тик береһе генә агитатор булып эшләй. Агитаторҙар райкомдың серьез ярҙамына мохтаждар, ләкин райком уларға был ярҙамды күрһәтмәй. 1950 йылда райком агитаторҙарҙың бер генә йыйылышын да һәм кәңәшмәһен дә үткәрмәгән.

Идеологик эштең насар хәлдә булыуында ғәйептең күпселек өлөшө партия райкомының иптәш Халкин етәкселек иткән пропаганда бүлегенә төшә. Пропаганда бүлеге эштә инициатива күрһәтмәй, уның работниктары партия ойошмаларында һирәк булалар һәм эштең торошон белмәйҙәр, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм массовый-политик эште яҡшыртыу буйынса райком бюроһы алдына мәсьәләләр ҡуймайҙар. Райкомдың пропаганда бүлеге мөдиренең фамилияһын да күп кенә партия ойошмаларында белмәүҙәре осраҡлы ғына түгел.

Район матбуғаты партия-политик һәм партия-ойоштороу эшен яйға һалыуҙа, яҡшы тәжрибәне дөйөмләштереүҙә һәм уны башҡаларға таратыуҙа партия ойошмаларына серьез ярҙам күрһәтергә саҡырылған. Ләкин район газетаһы (редакторы иптәш Ғәзизуллина) партия ойошмаларының эше тураһында һабаҡ бирерлек материалдарҙы газета биттәрендә һирәк урынлаштыра, уларҙың тормошона тәрән үтеп инмәй һәм етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә кәрәкле ярҙам күрһәтмәй.

Партия ойошмаларының эшендәге ҙур етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, уларға етәкселек итеүҙе тамырынан яҡшыртыу һәм колхоздарҙың, МТС-тарҙың хужалыҡ эшмәкәрлеге өсөн һәм учреждениеларҙың эшен яҡшыртыу өсөн уларҙың яуаплылығын һәм ролдәрен күтәреү ВКП(б) райкомының көндәлек эше булып тора.

Партия райкомы партия ойошмаларына партия-ойоштороу һәм партия-политик эште яҡшыртыуға иғтибарҙы туплауҙа, бөтә коммунистарҙы лә актив общественный эшмәкәрлеккә йәлеп итеүҙә, партия йыйылыштарын йышыраҡ һәм юғары идея кимәлендә үткәреүҙә, партия дисциплинаһын нығытыуҙа, политик мәктәптәр һәм түңәрәктәр эшенең кимәлен күтәреүҙә, занятиелар сифатын яҡшыртыуҙа ярҙам итергә, һәр бер коммунистың үҙенең идея-политик кимәлен систематик күтәреүенә өлгәшергә тейеш.

Партия ойошмаларының бөтә эшмәкәрлеген яҡшыртыуға райком көн һайын иғтибар бирергә бурыслы.

П. Баниров.

Планлы политик агитация эшселәрҙең хеҙмәт активлектәрен күтәрә

Стәрлетамаҡ станцияһының йөк тейәүселәр коллективында агит-массовый эште тейешле кимәлгә ҡуйыу беҙгә государство планын кварталь һайын срогынан алда үтәп барырға мөмкинлек бирә. Үткән йылда беҙ йыллыҡ планды 5 декабрҙә үтәнек. Һәм ағымдағы йылдың I квартал планын да срогынан алда үтәүгә өлгәштек. Шул уҡ ваҡытта меңәрләгән һум экономия бирҙек. Был уңышҡа беҙ массовый-политик эште киң йәйелдереү юлы менән коллективтың бөтә һәләтлеген производство планын срогынан алда уңышлы үтәүгә йүнәлдереү һөҙөмтәһендә өлгәштек.

Беҙҙең агитаторҙар коллективта һәр бер эшсенең инициативаһын күтәреүгә, уны яҡлауға ҙур иғтибар бирәләр. Сөнки инициатива — ул аңлылыҡты тойоуҙың бер төрө, ул производство күрһәткестәрен яҡшыртыуҙа хәл иткес саралар береһе булып тора.

Коллективта массовый эш алып барғанда, һәр үткәреләсәк беседаға ныҡлы әҙерләк менән килеү, күргәҙмә пособиелар, художественный китаптар ҡулланыу, коллектив алдында торған бурыстарҙы партия һәм хөкүмәтебеҙҙең политикаһына бәйләү—былар бөтәһе лә эшселәрҙең хеҙмәт һәм политик активлектәрен күтәрә һәм производство планын срогынан алда үтәү өсөн көрәштә уңышлы һөҙөмтәләр бирә.

Мин үҙем агитатор булып 12 йыл эшләйем. Ошо ваҡыт эсендә ҙур тәжрибә тупланым, бер нисә йөҙ доклад һәм беседалар үткәрҙем. Минең эшемдә газеталарҙың ярҙамы бик ҙур. Шуға күрә мин Үҙәк һәм өлкә газеталары, шулай уҡ «Гудок» һәм «Уфимский железнодорожник» газеталары аша Ленин һәм Сталин әҫәрҙәрен өйрәнәм. Бөйөк юлбашсыларыбыҙҙың хеҙмәттәрен өйрәнеү минең политик белемемде күтәреүгә ярҙам итә. Лениндең «Ни эшләргә?» тигән хеҙмәтен өйрәнеп, теоретик конференцияла ҡатнаштым. Хәҙер Лениндең «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа» тигән китабын өйрәнеү өҫтөндә эшләйем.

Агит-массовый эш алып барыуҙа тупланған тәжрибәләремде мин йәш агитаторҙарға таратам. Уларға ярҙам итәм. Минең ярҙамым арҡаһында, комсомолецтар Сафина, Имашева, коммунист Пунынин, партияһыҙ эшсе Блоткин һәм башҡа иптәштәр производствола алдынғылар сафына баҫтылар. Улар үҙ нормаларын 200 процентҡа еткереп үтәйҙәр.

В. Зюзин,
Стәрлетамаҡ станцияһының йөк тейәүселәр коллективы агитаторы.

Производство күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн

Красноусол быяла заводының партия ойошмаһы эргәһендәге агитколлективта 122 агитатор иҫәпләнә. Агитколлектив үҙенең бөтә эшен партбюро етәкселегендә, айлыҡ һәм кварталь пландары буйынса алып бара һәм эшселәрҙең политик аңын күтәреүгә, хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан үҫтереүгә йүнәлтә. Агитаторҙар үҙҙәренең беседаларында илебеҙҙең эске тормошо, халыҡ-ара хәл, стахановсыларҙың, производство алдынғыларының эш тәжрибәләре тураһында һөйләйҙәр. Был мәсьәләләр барыһы ла үҙебеҙҙең завод һәм цех тормошона тығыҙ бәйлән алып барыла.

Агитаторҙарҙың эшендә өлкә һәм район газеталары, стена газеталары һәм боевой листоктар бик мөһим урын тоталар. Улар заводтың алдынғы эшселәренең эш алымдарын таратырға, хеҙмәт дисциплинаһын күтәрергә, коллективтың берҙәмлеген нығытыуға ярҙам итәләр.

Агитколлектив алып барған массовый эш ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Быйыл I квартал планын завод 115 процентҡа үтәне.

Заводта социалистик ярыш киң йәйелдерелгән. Был өлкәлә агитаторҙар ныҡышмалы эш алып баралар. Улар цехтар, айырым эшселәр араһында ярыш ойоштороуҙа, социалистик йөкләмәләр алыуҙа инициатор булып торалар.

З. Ишмәратов.

Партгруппоргтар семинары

ВКП(б)-ның Дүртөйлө районы колхоз партия ойошмаларының баҫыусылыҡ бригадаларындағы партия һәм партия-комсомол группалары группоргтарының ике көнлөк семинарын үткәрҙе. Семинарҙа 16 кеше ҡатнашты.

Семинарҙа ҡатнашыусылар «Баҫыусылыҡ бригадаларындағы партия группалары һәм уларҙың бурыстары», «Бригадаларҙа социалистик ярыш ойоштороу», «Стена газеталарын һәм боевой листоктарҙы нисек сығарырға», «Бөртөклө һәм техник культураларҙы сәсеүҙең агротехникаһы» тураһында докладтар тыңланылар.

Семинарҙың аҙағында ВКП(б) Өлкә Комитетенең лекторы иптәш Горбатовскийҙың халыҡ-ара хәл тураһында лекцияһы булды.

Ә. Сәмиғуллин.

Башҡорт театрҙарының репертуарҙарын артабан яҡшыртыу өсөн

С. СӘИТБАТТАЛОВ

Башҡорт халҡының профессиональ һәм үҙ эшмәкәрлек театраль искусствоһы Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы һөҙөмтәһендә генә. Башҡортостанда Совет власы урынлаштырылыуының тәүге көндәрендә барлыҡҡа килде. Билдәле булғанынса, республикабыҙҙың алдынғы театры — Башҡорт Академия драма театры Совет Башҡортостанының йәштәше булып тора. Совет власы йылдарында большевиктар партияһының хәстәрлеге һәм алдынғы рус культураһы деятелдәренең ярҙамы арҡаһында башҡорт театраль искусствоһы ҙур уңыштарға өлгәште. Талантлы актерҙарҙың һәм художество етәкселәренең тотош плеядаһы барлыҡҡа килде.

Беҙҙең республикала Башҡортостан театраль искусствоһының ғорурлығы булып торған государство Академия драма театрынан башҡа опера һәм балет театры, район театрҙары, государство филармонияһы, рус драма театры һәм 5 меңдән дә артыҡ үҙ эшмәкәрлек художество түңәрәктәре эшләйҙәр. Был культура учреждениелары һәм художество үҙ эшмәкәрлеге халыҡҡа хеҙмәт итергә, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙә партияға ярҙам күрһәтергә саҡырылғандар.

Дөйөм билдәле булғанынса, театраль искусствоның нигеҙен драматургия тәшкил итә. Бөтә донъяла халыҡ рәүешендә иң яҡшы булып иҫәпләнгән рус классик театраль мәктәбе рус халҡының бөйөк драматургтары Фонвизин, Пушкин, Гоголь, Грибоедов, Островский, Чехов, Горький әҫәрҙәре нигеҙендә барлыҡҡа килә алған.

Большевиктар партияһы, иптәш Сталин социалистик реализм әҙәбиәтенең һәм искусствоһының сәскә атыуы тураһында даими хәстәрлек күрәләр. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең «Драма театрҙарының репертуары һәм уны яҡшыртыу буйынса саралар тураһындағы» ҡарарында театраль искусствоның мөһим бурысы бөтә тулылығы менән асыҡ билдәләнгән. Партия совет обществоһы, совет кешеһе тураһында идея һәм художество яғынан тулы ҡиммәтле әҫәрҙәр тыуҙырыуҙы бурыс итеп ҡуя.

ВКП(б) Үҙәк Комитете ҡарары сыҡҡанға тиклем башҡорт театрҙары репертуарының торошо ҡәнәғәтләнерлек түгел ине. Башҡорт Академия театрының һәм республикалағы башҡа драма театрҙарының сәхнәләрендә оҙаҡ йылдар буйына башлыса тарихи темаға һәм тормош этнографик темаларына яҙылған пьесалар ғына күрһәтелде. Шуның менән бергә, был пьесалар башҡорт халҡының ысын тарихын һәм тормошон күрһәтә алмағанлар, ә йыш ҡына хәлдәрҙә уны боҙоп күрһәттеләр, башҡорттарҙың иҫке патриархаль тормошон идеаллаштырҙылар, уларҙың ҡайһы берҙәре милләтселек рухы менән һуғарылғандар ине. Ә һирәк-һирәк кенә күренгән совет темаһына яҙылған пьесалар, драматург С. Мифтаховтың бер нисә пьесаларынан башҡалары, беҙҙең ысынбарлыҡты боҙоп күрһәтәләр ине, улар беҙҙең социалистик обществобыҙ өсөн хас булмаған ялған конфликттарҙы тәҙәлгәйнеләр. Бындай пьесаларҙы хәҙер һанап үтеүҙең кәрәге юҡ. Улар общественность тарафынан күп тапҡырҙар ҡаты тәнҡитләнделәр. Башҡорт драматургтарының оригиналь пьесаларынан Х. Ибраһимовтың «Башмағым», С. Мифтаховтың «Балҡанда», Ғ. Әмириҙең һәм В. Ғәлимовтың «Ҡара йөҙҙәр» һәм Ҡ. Даяндың «Таңсулпан» кеүек пьесалар ғына ваҡыт һынауын үттеләр һәм сәхнәлә оҙаҡ ваҡыттар буйына йәшәйҙәр. Һәм улар бөтәһе лә башҡорт һәм татар халҡының революцияға тиклемге тормошон сағылдыралар. Уларҙа хеҙмәтсәндәрҙең үҙҙәрен азат итеү өсөн алып барған героик көрәштәре тулыһы менән күрһәтелмәйҙәр.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты 1945 йылдың башында уҡ Башҡортостан партия ойошмаһында пропаганда-агитация эшенең торошо тураһында һәм уны яҡшыртыу саралары тураһындағы ҡарарында башҡорт драматургтарының иғтибарын хәлдең ошондай булыуына йүнәлткәйне. Был ҡарарҙа айырым тарихсылар, яҙыусылар тарафынан башҡорт халҡының тарихи үткәнен яҡтыртыуҙа ебәрелгән серьез идеологик хаталар билдәләнеп үтелгәйне. Ғилми работниктар һәм яҙыусылар алдына мөһим бурыс: башҡорт халҡының тарихын, уның иң яҡшы милли традицияларын, царизмға һәм сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы рус халҡы менән бергә алып барған көрәшен, Совет власы йылдарында башҡорт халҡының ҡаҙаныштарын, немец-фашист баҫҡынсыларға ҡаршы уның көрәшен дөрөҫ яҡтыртыусы әҫәрҙәр тыуҙырыу бурысы ҡуйылғайны. Ошонда уҡ айырым яҙыусыларҙың ижадында башҡорттарҙың үткәндәге патриархаль-феодаль тормошон идеаллаштырыу, маҡтау күренештәре ғәйепләнеп үтелгәйне һәм яҙыусыларҙың иғтибары беҙҙең героик совет ысынбарлығына, хеҙмәт һәм коммунизм өсөн көрәш темаларына йүнәлдерелде.

Был ҡарар һәм бигерәк тә ВКП(б) Үҙәк Комитетенең драма театрҙарының репертуары тураһындағы ҡарары башҡорт драматургияһын үҫтереүҙә хәл иткес әһәмиәткә эйә булып торҙолар.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете Башҡортостан совет яҙыусылары союзының эше тураһында 1951 йылдың 20 февралендә ҡабул иткән ҡарарында һуңғы йылдарҙа театрҙарҙың яңы репертуарына нигеҙ һалынды, тип билдәләп үтте. Драматургтар ижадында хәҙерге заман совет темаһына бороулыш барлыҡҡа килде, Совет ысынбарлығы, совет кешеләренең патриотик подвигтары һәм рухландырғыс хеҙмәттәре төп тематика булып әүерелделәр. Башҡорт яҙыусыларының хәҙерге замандың актуаль мәсьәләләренә боролош яһауҙары һәм совет кешеһен социалистик хеҙмәттең иң мөһим өлкәләрендә күрһәтеү өсөн уларҙың тырышлыҡтары һис шикһеҙ совет драматургияһының диапазонын киңәйттеләр. Совет тематикаһындағы пьесалар хәҙер колхоз тормошо тураһында ғына түгел, ә эшселәр синыфы, промышленностең алдынғы кешеләре тураһында ла яҙыла башланылар инде, былар әлек юҡ ине. Килрәй Мәргәндең «Ҡала иртәһе», И. Абдуллиндең «Тәрән һулыш», Ә. Бикчәнтәев һәм Р. Хәйруллиндең «Сәғиҙә» һәм В. Ғәлимовтың А. Фадеев романы буйынса яҙылған «Батырҙар» пьесалары һәм башҡа бер нисә пьесалар быны асыҡ күрһәтәләр.

Быйылғы сезонда Башҡорт Академия театры башҡорт драматургтарының — М. Кәримдең «Яңғыҙ ҡайын», М. Хәйдаровтың «Ирәндек буйында» кеүек дүрт яңы оригиналь пьесаларын ҡуйҙы. Был пьесаларҙың һәр ҡайһыһының үҙҙәренә хас булған етешһеҙлектәре булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың сәхнәгә ҡуйылыуы шикһеҙ ыңғай күренеш булып тора.

Беҙҙең драматургтарыбыҙ тормошто яҡындан торап һәм тәрәнерәк өйрәнеп, үҙҙәренең әҫәрҙәрен беҙҙең социалистик обществобыҙ өсөн характерҙа булған конфликттарға нигеҙләп яҙа башланылар.

Беҙҙең драматургтарыбыҙҙың һуңғы 4-5 йыл эсендә яҙған күпселек пьесаларында яңылыҡтың иҫкелек менән, прогрестың консерватизм менән көрәше төп конфликт итеп алынды. Был конфликт беҙҙең социалистик обществобыҙҙың тәбиғәтенә тура килә. Ләкин бәлә шунда, был пьесаларҙың күпселеге бер-береһенә бик оҡшағандар, яңылыҡты һәм иҫкелекте йөрөтөүселәр араһындағы конфликт бик ябай, тура һыҙыҡ буйынса ғына күрһәтелә һәм конфликт тура һөжүм итеү менән хәл ителә. Ә тормошта быларҙың бөтәһе лә ҡатмарлыраҡ була. Беҙҙең драматургтарыбыҙ яҙыусы, башҡа өлкәләрҙең инженерҙарынан айырмалы рәүештә, кешеләр рухының инженере булып торғанлыҡтарын йыш ҡына хәлдәрҙә оноталар. Уларҙан йыш ҡына: «Мин малсылыҡ тураһында пьеса эҙләйем», «Нефть тураһында пьеса яҙам» тигән һүҙҙәрен ишетергә тура килә. Драматургтар үҙҙәренең геройҙарының индивидуаль характерҙарын күрһәтмәйҙәр. Ә рус драматургияһының иң яҡшы мастерҙары драматик конфликт бөтәһенән дә элек кесле һәм маҡсатҡа йүнәлдерелгән, ижади хеҙмәт процесында асыла торған характерҙар бәрелешендә тәҙәләргә тейеш, тип әйтәләр.

Беҙҙең драматургтарыбыҙ В. И. Лениндең барыһы тик социализм ваҡытында ғына шәхестең, талантарҙың сәскә атыуы башланыр, тигән күрһәтмәләренә нигеҙләнеп, совет кешеһенең бай шәхесен асып бирергә тейештәр. Драматургтар совет кешеләрен, тормошон штамплауға юл ҡуймайынса күрһәтергә тейештәр. Сөнки иптәш Сталин былай тип күрһәтә: «характер һәм личный көн күреш өлкәһендәге уравниловка реакцион ваҡ буржуаз мәғәнәһеҙлек булып тора» һәм «кешеләрҙең телдәктәре (вкус) һәм кәрәктәре социализм осоронда ла, коммунизм осоронда ла сифат яғынан йәки һан яғынан бердәй һәм тиң булмайҙар һәм була алмайҙар» («Ленинизм мәсьәләләре», 498-499-сы биттәр).

Мостай Кәримдең быйылғы сезонда Башҡорт Академия театры сәхнәһендә ҡуйылған «Яңғыҙ ҡайын» пьесаһы ошо пландан ҡарағанда уңышлы булыуы менән айырыла. Пьесаны һәм спектаклде общественность башҡорт драматургияһын үҫтереүҙә алға табан бер аҙым булып тора, тип баһаланы. Пьеса етешһеҙлектән махрум түгел, композицион тәртиптә уның йомшаҡ урындары ла бар. Ул күп һүҙле һәм оҙон яҙылған, ләкин шулай булыуға ҡарамаҫтан, «Яңғыҙ ҡайын» пьесаһы сифат яғынан яңы ыңғай күренеш. Сөнки беҙ унда тәрән һәм маҡсатҡа йүнәлтелгән характерҙарҙың бәрелешен күрәбеҙ.

ВКП(б) Өлкә Комитете беҙҙең ижади работниктарыбыҙға рус культураһын тәрәнерәк өйрәнергә һәм үҙләштерергә ҡаралды [illegible] ...ревлектә бер нисә тапҡыр [illegible] үтте. Бары тик алдынғы рус [illegible] һына эйәреп кенә искусствоның [illegible] тәрән идеялы әҫәрҙәрен тыуҙырырға [illegible] жин. Тормош ошо бай [illegible] даими мөрәжәғәт иткән яҙыусы[illegible], композиторҙарҙың һәм актерҙарҙың үҙ ижадтарында уңышҡа өлгәшә[illegible]лыҡтарын күрһәтә.

И. Абдуллин беҙҙә иң актив [illegible] драматург булып тора. Һуңғы бер [illegible] эсендә ул 5 пьеса яҙҙы һәм улар [illegible] мия театрының сәхнәләрендә [illegible] лар. Ул күп яҙа һәм интенсив [illegible]. Ләкин үкенескә ҡаршы, уның бөтә[illegible] лары ла бер-береһенә оҡшаған бул[illegible]ғалар. Уның тәүге, сағыштырма[illegible] уңышлы яҙылған «Тәрән һулыш» [illegible] һы менән сағыштырғанда башҡа [illegible]ры алға табан аҙым булып тор[illegible]. «Минең йырым» пьесаһы ялған [illegible]тә төҙөлгән. Драматург үҙенең [illegible] тоды тураһында серьез уйларға, [illegible] талығын камиллаштереү өҫтөндә [illegible]малы эшләргә тейеш.

Күренеүенсә, башҡорт драмату[illegible] ВКП(б) Үҙәк Комитетенең драма [illegible] репертуары тураһындағы ҡарарын[illegible] һәтелгән талаптарға тулыһы менән [illegible] биреүсе әҫәрҙәр тыуҙыра алмайҙар[illegible]. Башҡорт халҡының героик үткә[illegible] һәм совет ысынбарлығынан бу[illegible] бик күп кенә темалар тейешенсә [illegible]тылмайҙар. Салауат Юлаев, Ча[illegible] Ғәйбирҙин, Матросов кеүек ғүзәл [illegible] үҙҙәренең сәхнәлә күрһәтелеүен [illegible].

Халыҡтар дуҫлығы, бигерәк тә [illegible] рус халҡы менән мәңгелек айырылмаҫ дуҫлыҡ, промышленность, ауыл ху[illegible]ғы һәм культура өлкәһе кешеләренең [illegible] үҙе, уларҙың яңы рухани йөҙө, больше[illegible]тар партияһының етәксе һәм ойоштороусы роле киң һәм оҫта итеп күрһә[illegible] тейеш. Ябай кешеләрҙе тәрәнерәк һәм [illegible] тараҡ күрһәтергә, иптәш Сталиндың [illegible] уңышһыҙ-тынһыҙ ғына заводтар һәм фа[illegible]рикалар, шахталар һәм тимер юл[illegible]лыусы, колхоздар һәм совхоздар [illegible] тормоштоң бөтә байлыҡтарын тыу[illegible]сы, бөтә донъяны туйҙырыусы һәм [illegible] бейҙереүсе эшселәр һәм крестьяндар, яңы тормоштоң ысын геройҙары [illegible] ижадсылары бына кемдәр» тигән һүҙ[illegible] хәтерҙә тоторға кәрәк. («Ленинизм мәсьә[illegible]ләләре», 448-се бит).

Беҙҙең драматургтарыбыҙ күберәк [illegible] хоз көрәлеше темаһын һайлап ал[illegible]. Шул уҡ ваҡытта Ленин — Стали[illegible] тияһы ихтыяры менән Башҡортостан[illegible]ың эре промышленность үҙәктәренең [illegible]реһенә әүерелеүен иҫәпкә алмайҙар.

Башҡорт драматургтарының әҫәр[illegible] совет ҡатын-ҡыҙҙарының тулы образ[illegible] күрһәтелмәгән әле. Бөтә кешеләрҙе [illegible] ҡыҙыҡһындырыусы тема — тыныслыҡ [illegible] көрәш темаһы буйынса әҫәр яҙыл[illegible] юҡ. Балалар театрҙарҙы репертуар[illegible] художество үҙ эшмәкәрлек түңә[illegible] өсөн бәләкәй формалағы әҫәрҙәр ты[illegible]рыуҙың торошо һис бер ҡәнәғәтләнерлек түгел. Беҙгә үҙ эшмәкәрлек түңәрәк коллективтарын тулы ҡиммәтле репертуар менән тәьмин итеүгә айырыуса иғ[illegible] бирергә кәрәк.

Балалар репертуарына ошондай уҡ [illegible]тибар бирелергә тейеш. Был [illegible] З. Биишеваның уңышлы ғына яҙ[illegible] «Дуҫлыҡ» пьесаһынан башҡа әҫәр [illegible] әле.

Милли драматургияны үҫтереү [illegible]һендә Башҡортостан совет яҙыусы[illegible] союзы тарафынан үткәрелгән эште [illegible]лек тип иҫәпләп булмай. Өлкә [illegible] активының идеология мәсьәләләр [illegible]реүгә арналған йыйылышында [illegible] яҙыусылар союзында театрҙар өсөн [illegible]лар менән эш яҡшы тора, был өлкә[illegible] уңышлылыҡтар бар, тигән фекер [illegible]. Тормош, эшләнгән эш байтаҡ булыуы[illegible] рамаҫтан, үҙ-үҙеңде тынысландырыу[illegible] етерлек тиклем нигеҙлектәр юҡ [illegible] күрһәтә. Башҡортостан яҙыусылары[illegible] матургия әҫәрҙәре өҫтөндә даими [illegible] майҙар әле.

Башҡортостандың драматургтары[illegible] композиторҙары алдында беҙҙең опера[illegible] балет театры өсөн милли репертуа[illegible]дырыу буйынса ҙур эш тора. Яңы [illegible]туарҙың булмауы опера театры эшле[illegible] вененең ижади үҫеүендә торҡарлыҡ [illegible].

Беҙҙең театрҙарыбыҙҙың репертуа[illegible]лары ҙур етешһеҙлектәрҙе бере[illegible] тағы ошоно күрһәтергә кәрәк, рус [illegible] сик драматургияһының әҫәрҙәре, [illegible] драматургтарының иң яҡшы [illegible] башҡорт теленә аҙ тәржемә ителә[illegible].

Әҙәбиәттең бер генә жанры ла [illegible] драматургия кеүек көслө тәьҫ[illegible] мөмкинлегенә эйә булып тора алмай[illegible] тибыбыҙ уның әһәмиәтенә юғары [illegible] бирҙе. Һәр бер яҡшы пьеса партия[illegible] вет халҡын коммунистик тәрбиәләү[illegible]ҙам итә. Башҡортостан совет яҙыусы[illegible] правлениеһе, уның драматургтар [illegible]һы һәм бөтә башҡорт яҙыусылары [illegible] хәтерҙә тоторға тейештәр. Беҙҙең [illegible]рыбыҙ һәм үҙ эшмәкәрлек художест[illegible] церкәтеребеҙ өсөн күп төрлө бай, идеялы һәм юғары художестволы [illegible]туар тыуҙырыу буйынса эшкә [illegible]тотонорға кәрәк.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Колхоздарҙы кино менән хеҙмәтләндереүгә иғтибар бирелмәй"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 51-се номерендә Бөрйән районында колхозсыларҙы кино менән хеҙмәтләндереү эшенең ҡәнәғәтләнерлек ҡуйылмауы тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Бөрйән район комитете редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Колхозсыларҙы кино менән хеҙмәтләндереүгә иғтибар бирелмәй» тигән хәбәр ВКП(б) район комитетенең бюро ултырышында тикшерелде. Бюро райондың колхозсыларын кино менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыуға ҡарата [illegible] ралар билдәләне. Шул уҡ ваҡытта [illegible] нофикацияның Бөрйән бүлеге [illegible] иптәш Казанцеваға үҙенә тапшырылған эшкә иғтибарһыҙ ҡарағанлығы [illegible] лек үтелде».

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Дөйөм мәжбүри уҡытыуҙы тормошҡа ашырыу юлында

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Бөрө район Советының халыҡ мәғарифе даими комиссияһы үҙенең эшен, уҙған йылғы эш тәжрибәләренән сығып, бына ошо почетлы һәм яуаплы бурысты намыҫлы үтәүгә көйләтте.

Эште комиссия члендарының тулы составында ҡабул ителгән план нигеҙендә ойоштороҡ.

Даими комиссияның тапшырыуы буйынса беҙ күптән түгел Бажан ете йыллыҡ мәктәбенә барҙыҡ. Унда яҙғы экзамендарға әҙерлек эшенең торошон һәм был ауыл Советында дөйөм мәжбүри уҡытыу иҫәбе тормошҡа ашырылыуын тикшерҙек. Һөҙөмтәлә сериоҙ етешһеҙлектәр асылды. Уҡытыусылар коллективы һәм мәктәп директоры иптәш Абратова үҙҙәренең төп бурыстарын үтәүгә етерлек тикшереп иғтибар менән ҡарамағандар. Ҡайһы бер программа материалдары ҡыҫҡартылып, өҫтән-өҫтән генә үтелгән. Шунлыҡтан уҡыусылар дәрестә ныҡлап үҙләштерә алмайҙар. Иптәш Абратова СССР Конституцияһынан «Совет граждандарының төп бурыстары» тигән 9 сәғәтлек программа материалын бер сәғәт эсендә үк үткән.

Бындай хәл рус теле һәм география дәрестәрендә лә бар. Шундай сәбәптәр арҡаһында был мәктәптә 5, 6, 7-се класс уҡыусыларынан 48 бала, йәғни тулы бер класс бөтөнләй уҡыуҙа өлгәшмәй.

Бажан ете йыллыҡ мәктәбен тикшереп ҡайтҡас, мәсьәләне район Советы исполкомының ултырышына ҡуйҙыҡ. Бында ошо мәктәп директорының докладын тыңланды. Район Советы исполкомы был мәктәптәге уҡыу-уҡытыу эштәренең ҡуйылышы менән ныҡлап танышҡас, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн практик саралар билдәләне.

Даими комиссия апрель айының тәүге яртыһында шулай уҡ Сорвихин, Пономаревка мәктәптәрендә уҡыу-уҡытыу, яҙғы экзамендарға әҙерлек эштәренең торошон тикшерҙе. 28 апрелдә даими комиссияның районһдағы ауыл Советтары председателдәре ҡатнашлығында үткәрелгән ултырышында район мәғариф бүлеге мөдире иптәш Васильевтың дөйөм мәжбүри уҡытыу эшенең Бөрө районы мәктәптәрендә үтәлеше хаҡында докладын ҡуйылды.

Беҙ район сауҙа ойошмаларының уҡыу йәшендәге балаларҙы аяҡ һәм өҫ кейемдәре менән тәьмин итеүҙе иҫәпкә ойоштороуын тикшерҙек. Һөҙөмтәлә бында ла ҙур етешһеҙлектәр асылды. Тикшереү һөҙөмтәһе район Советы исполкомына ҡуйылды. Хәҙер беҙҙең райондағы магазиндарҙа балалар өсөн аяҡ һәм өҫ кейемдәре етерлек булдырылды.

Халыҡ мәғарифе комиссияһы члендарының — депутаттарҙың булышлығында мәктәптәрҙә ата-әсәләрҙең комитеттары эшә йәнләндерелде. Хәҙерге ваҡытта Камышинка, Печенкин һәм Старо-Петровск мәктәптәрендә һайланған бындай комитеттар айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Беҙ йыш ҡына мәктәптәрҙәге уҡыусыларҙың ата-әсәләре йыйылыштарында лекциялар, докладтар менән сығыш яһайбыҙ.

Ауыл Советтарына сығып, уҡыусылар һәм уҡытыусыларҙың тормош шарттары менән танышып торабыҙ. Мәҫәлән, һуңғы көндәрҙә ошо маҡсатта Пономаревка ауыл Советындағы 5 мәктәпте тикшерҙек. Һөҙөмтәлә бында уҡытыусылар утын менән тәьмин ителмәгәнлеге, квартираларына ремонт яҡшылап үткәрелмәгәнлеге һәм уҡыусыларға дөйөм торлаҡ ойошторолмағанлығы билдәләнде. Был мәсьәләне лә район Советы исполкомына индерҙек, етешһеҙлектәр ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бөтөрөлдө.

Р. Әмирова,
Бөрө район Советының халыҡ мәғарифе даими комиссияһы председателе.
Е. Попова,
Комиссия члены.

Башҡорт АССР-ы МТС-тарында комбайндарға ремонт барышы*)

(План үтәлеше, 1951 йылдың 15 майына, процентарҙа)

Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған
1	Дәүләкән	100	33	Баймаҡ	21	65	Языково	10
2	Һуҡҡул	57	34	Мәләүез	20	66	Бишенде	10
3	Октябрьский	50	35	Бишбүләк	20	67	Калининков	10
4	Матрай	48	36	Ново-Троицк	20	68	Хәйбулла	10
5	Сыңташтамаҡ	44	37	Хоҙайбирҙе	20	69	Забельск	9
6	Бөжөр	40	38	Арҡауыл	19	70	Ҡарыш	9
7	Яңауыл	40	39	Ташлы	19	71	Нуриман	9
8	Петровск	39	40	Йәркәй	19	72	Мрәсем	8
9	Емаш	38	41	Әбдрәшит	18	73	Услы	8
10	Суйыңсы	37	42	Имәнле ҡул	18	74	Елдәр	8
11	Шәрип	36	43	Белоҡатай	17	75	Күгәрсен	8
12	Борай	34	44	Мәсәғүт	17	76	Бәләбәй	7
13	Шланлы	33	45	Бүләк	17	77	Ҡалтасы	7
14	Рәжәп	32	46	Миәкә	17	78	Приют	7
15	Усть-Икин	31	47	Таймас	15	79	Байҡы	6
16	Туймазы	30	48	Степной	15	80	Ермолаевка	6
17	Андреевка	30	49	Ҡасәү	15	81	Күрҙем	5
18	Ямады	30	50	Мраҡ	15	82	Ҡарлыман	5
19	Ишле	29	51	Үләй	14	83	Малояз	4
20	Һүрән	29	52	Ҡандра	13	84	Баҡалы	4
21	Федоровка	28	53	Маҡар	12	85	Охлебинин	4
22	Балан	28	54	Аксен	12	86	Таутөмән	4
23	Туҡмаҡлы	28	55	Күҙәй	12	87	Төләкәй	4
24	Подлуб	27	56	Аслыкүл	12	88	Дмитриевка	4
25	Күңгәк	27	57	Моторный	12	89	Пугачев	3
26	Саҡмағош	27	58	Байғужа	12	90	Сибай	3
27	Чурай	25	59	Сермән	12			
28	Ҡыйғы	23	60	Учалы	12			
29	Ҡуш-Йылға	22	61	Покровка	11			
30	Ҡаран	22	62	Бөрө	11			
31	Подгорный	22	63	Ярослав	10			
32	Ерекле	21	64	Әбдрәзәҡ	10			

*) Тотҡан урыны ремонт планының үтәлешенә ҡарап билдәләнә. Сводкала күрһәтелмәгән башҡа МТС-тар бер төрлө лә үтәлеш бирмәнеләр.

НОВАТОРҘАР ӨЛГӨҺӨНДӘ

Производство новаторҙары — Уралмашзавод экономисе Белов һәм мастеры Зубарев иптәштәрҙең гүзәл башланғысы Өфөләге полиграфик буяуҙар заводы коллективының ижади активлығын күтәрҙе.

Бынға тиклем заводта алиф ҡайнататорған ҡаҙан сменаға ни бары бер, бер ярым тонна ғына алиф ҡайната ине. Уны тулыһынса файҙаланыу өсөн химик составтарҙың яңы технологик үҙенсәлектәрен үҙләштереү талап ителде.

Заводтың баш инженеры Буриков, цех начальнигы Речкова һәм мастер Шакуров иптәштәр алиф ҡайнатыуға талап ителә торған химик составтарҙың яңы технологик үҙенсәлектәрен үҙләштереү өҫтөндә ныҡышып эшләү һөҙөмтәһендә яҡшы күрһәткестәргә өлгәштеләр. Хәҙер шул уҡ ҡаҙан сменаға ике, ике ярым тонна алиф сығара башланы.

Р. Сафин.

Ярышта беренселек өсөн

Ғафури райместпромкомбинаты (директоры иптәш Баҡаев) производство пландарын айҙан-айға арттырып үтәй. Комбинат, 1951 йылдың I квартал планын 159,5 процентҡа үтәп, республиканың урындағы промышленность предприятиеләре араһында икенсе урынды алды һәм уға 10.000 һум бүләк бирелде.

Кейем тегеү цехы (мөдире А. Зюзина) ярышта беренсе урынды тота. Ул апрель айы планын 558 процентҡа үтәне, хәҙер темпты тағы ла күтәреп ебәрҙе. Был гүзәл еңеүҙе яулап алыуҙа ҡарт мастер Әхмәтьян Искәндәровтың хеҙмәте ҙур. Ул йәш тегеүселәрҙе алдынғы эш методтарына өйрәтә, уларҙан мастерҙар әҙерләй.

Тегермәс яһау һәм туғын бөгөү цехтары ла (начальниктары Посопов һәм Петров) юғары етештереүсәнлек өлгөләре күрһәтәләр. Улар туғын бөгөүҙең 1951 йыл планын үтәнеләр һәм пландан тыш 1850 стан туғын биреү өсөн көрәшәләр. Тәгәрмәс яһау мастерҙары М. Шарипов, И. Петров һәм башҡа иптәштәр май айы заданиеһен ун көн эсендә үтәнеләр.

С. Усманов.

Яңы быуалар төҙөлә

Әлшәй ЛЗС-ының агролесомелиоратив бригадаһы былтыр Булганин исемендәге эрелтелгән колхозда ҙур быуа ҡорҙо. Уның дөйөм майҙаны 29 гектар тәшкил итә. Хәҙер колхоз правлениеһе был быуала балыҡ үрсетә башланы. Унда 2 центнер сазан балығы ебәрелде.

Быйыл ошо уҡ колхоздың 4-се бригадаһында, Баязит ауылы эргәһендә ҙур быуа төҙөү эше башланды. Уның дөйөм майҙаны 40 гектар тәшкил итәсәк. Быуа төҙөү эшендә экскаваторҙар, йөктө үҙе бушата торған 3 автомашина һәм бульдозерҙар эшләй.

Н. Сабитов.

Тракторист

Паһлеванлай кила егет
Тракторы өҫтөндә,
Тауҙар күкһеллеге уның
Күҙҙәренең төҫөндә.
Ер һөрөп СТЗ-НАТИ
Ярһынып бара алға,
Сөнки ул егеттең ҡайнар
Йөрәгенән көс ала.
Сөнки йөрәктә хеҙмәткә
Булған көслө һөйөү бар,
Һәм шуға дәртле иңырай
Машинаның йыры ла.
Был һөйөү тыуҙы алыҫта
Ҙур михнәтле юлдарҙа,
Шомло көндәр ҡосағында,
Һөрөм тулған ҡырҙарҙа.
Имешлек — бөйөк изгелек.
Ерҙә бәхет хаҡына,
Трактор руле тотҡан
Пехота һалдаты ла.

Ғ. Ғәлиева.

Совет фәне кешеләре

I. ФАТИМА МОСТАФИНА

1.

... Залда минутлыҡ тынлыҡ урынлашты. Сал сәсле ғалимдәр, исемдәре бөтә илгә билдәле хеҙмәт геройҙары, совет фәненең һәм техникаһының алдынғы вәкилдәре трибунаға ҡарайҙар. Был зал — ВКП(б) Үҙәк Комитеты эргәһендәге общественный фәндәр Академияһының конференц-залы. Бөтәһенең дә иғтибарын үҙенә йәлеп итеп, трибунаға күтәрелгән кеше — ошо Академия аспирантураһының диссертантҡаһы башҡорт ҡыҙы Фатима Мостафина ине.

Философия фәндәре кандидаты исемен алыу өсөн башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан республика тарихында иң беренсе булып диссертация яҡлаусы Фатима Мостафина ҡыйыу аҙымдар менән трибунаға үтә. Уның ап-аҡ йөҙендә һәм Урал төне кеүек ҡом-ҡара күҙҙәрендә бер нисә секундҡа ҡаушау түгел, тулҡынланыу, тәрән тулҡынланыу сағылып китә. Фатима шунда уҡ үҙен ҡулға ала, үҙ-үҙенә, бөтә залға ышаныс биргән тонга күсеп һүҙ башлай.

Башҡорт ҡыҙы философия буйынса диссертация яҡлай! Хеҙмәткә яңы мөнәсәбәт тураһында совет фәненә яңы һүҙ өҫтәй. Диссертация шулай атала ла: «Йәш эшселәрҙә хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәттең формалашыуы».

Фәнни хеҙмәттең йөкмәткеһе тураһында һөйләгәнсе уның авторының тормош һәм хеҙмәт юлына күҙ һалайыҡ.

2.

Бөйөк Октябрҙең дауыллы көндәрендә тәү тапҡыр ҡояш күргән ҡыҙ ул. Уның аҡлы тормошо ла хеҙмәттә башланды.

Әйтергә кәрәк, ауыр, ғазаплы хеҙмәттә башланды Фатиманың тормошо. Ул әсәһенең итәгенә тотоноп йөрөй башлағанда уҡ атаһы юҡ ине инде. Әсә береһенән-береһе бәләкәй өс йәш бала менән 1921 йылдың бөтә ил башына төшкән аслыҡ хәүефен Самара губернаһындағы башҡорт ауылында ҡаршыланы. Ауылда өс сабыйҙың ғүмерен аслыҡтан һаҡлап ҡалырға мөмкинлек юҡ ине.

Тап бына шул көндәрҙә Фатимаға балалар йортона барырға кәңәш бирҙеләр.

Бына шул саҡта Фатима бик ҙур дәрәжәлеге аңланы: илебеҙ ауыр осор кисерһә лә, Совет хөкүмәте балаларҙың тормоштарын һаҡлау өсөн барлыҡ сараларҙы күрә. Фатима үҙе лә, уның һеңлеһе менән ҡустыһы ла, уның ауырыу әсәһе лә йәшәргә тейештәр.

Фатиманы балалар йортонда ашаттылар, эсерҙеләр ҙә, яңы кейемдәр бирҙеләр.

— Юҡ, юҡ! — тине бәләкәй ҡыҙ. — Кейенмәйем әле. Әсәйемде, Әнүәр менән Майгөлдө алып килем дә, кейенермен!

Уның әсәһе шул уҡ балалар йортона аш бешереүсе булып эшкә урынлашты. Бына шунда Фатима тәү тапҡыр китап менән танышты, шунда тәү тапҡыр ҡәләм тоторға өйрәнде, «әсәйем» һүҙе менән рәттән «Ленин», «Сталин» тигән һүҙҙә яҙырға өйрәнде. Донъя яҡтырып китте уның өсөн, уҡырға һәм эшләргә киң мөмкинлектәр асылды...

3.

1926 йылдың көҙөндә Фатиманы Ленин мәктәбенә ҡабул иттеләр. Ул үҙенең урынын илебеҙ йәштәренең алдынғы отрядендә — Ленин комсомолы сафында күрҙе һәм 1929 йылда ВЛКСМ члены ҡабул ителде. Шул уҡ йылда ул институтҡа әҙерләнеү курсына уҡырға инде.

Өфө педагогия институтында уҡығанда, Фатима Мостафина комсомол ойошмаһы етәкселәренең береһе булып китте. Ошо йылдар уның артабанғы тормошона юҫын юнәлеш бирҙеләр. Институтты тамамлап, Белорет ҡалаһында урта мәктәптә, һуңынан техникумда уҡытҡанда ла ул комсомол эшен ташламаны. Тәбиғәт фәндәре һәм химия уҡытыусыһы булараҡ, Фатима йәштәрҙә хеҙмәткә һәм белем алыуға аңлы, социалистик мөнәсәбәт тәрбиәләүҙе үҙенең мөһим бурысы итеп иҫәпләне.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда Фатима Мостафина Өфө ҡалаһының промышленность районында урынлашҡан башҡорт

педагогия училищеһында уҡыта ине һәм ВЛКСМ-дың Молотов райкомы эшендә лә яҡындан торол ҡатнаша ине. Ватаныбыҙ ауыр көндәр кисергәндә ул фронтҡа ярҙам итеү, паровоз ремонтлау заводында һәм башҡа предприятиеләрҙә фронт бригадалары ойоштороу өсөн бөтә көсөн бирҙе. Училище һәм завод уның өсөн бер мәктәпкә әйләнде.

Йәштәр-комсомолецтар Фатима Мостафинаны тыңларға күнектеләр, уның йәшендә үҙҙәренең ҙур ойоштороусы-етәкселәрен күрҙеләр. Бына шуның өсөн дә республика комсомолецтары уны 1943 йылда ВЛКСМ Өлкә Комитетының секретары итеп һайланылар. Комсомол эшендә үҙен күрһәткәндән һуң Фатима Мостафина ВКП(б) Өлкә Комитеты аппаратына эшкә күсерелде.

Ватан һуғышы тамамланып ике йыл үҙғас та, Фатима Мостафина Мәскәүгә уҡырға ебәрелде.

4.

Бына ул үҙе — донъялағы иң алдынғы илдең иң ҙур ғалимдәре алдында философия фәндәре буйынса диссертация яҡлауы.

Фәнни хеҙмәттең беренсе главаһы «Государство хеҙмәт резервтары — СССР-ҙа эшселәр синыфын тулыландырыуҙың мөһим сығанағы» тип атала. Беҙҙең илебеҙҙә хеҙмәт—дан эше, намыҫ эше икәнлеге совет эшселәренең хеҙмәте фән менән тығыҙ бәйләнгәнлеге тураһындағы һүҙҙәрҙән башлана был глава һәм хеҙмәт резервтары әҙерләү буйынса алып барылған ҙур эшкә фәнни анализ бирелә.

Элекке ваҡытта, рәсәйҙә, эшселәр үҙҙәре заводтарға һәм фабрикаларға килләләр ине; үҙҙәренә үгәй әсә булып әүерелгән ауылдарҙа бөлгөнлеккә төшкәс, бер һыныҡ икмәклек эш эҙләп ҡалаға, предприятиеләргә киләләр ине. Тимәк, эшселәр отряды стихиялы үҫә ине. Совет власы йылдарында ауыл — крәҫтиән өсөн үгәй әсә булыуҙан туҡтаны. Иптәш Сталин, ошо хәлде иҫкә алып, промышленность эшселәре әҙерләүҙә ойошҡан набор уҙғарыу политикаһына күсергә күрһәтмә бирҙе. Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге осорҙа хеҙмәт резервтарын әҙерләү буйынса байтаҡ ҡына ыңғай һөҙөмтәләргә лә өлгәшелде.

Колхоздар менән коллектив договорҙар төҙөү системаһы, ФЗО мәктәптәре селтәрен киңәйтеү — эшселәр синыфын тулыландырыуҙа ҙур бер этап булды. Был осорҙа промышленносҡа 1.4 миллиондан артыҡ эшсе өҫтәлде.

Хәҙер совет обществоһында етәкселек ролен башҡарыусы эшселәр синыфының яңы өҫтәмәһе сифат яғынан да коммунизм төҙөү бурыстары яғарылығында булырға тейеш. Диссертация авторы үҙенең төп иғтибарын шуға юнәлтә: 1940 йылдың 2 октябрендә СССР Верховный Советы Президиумының «СССР государство хеҙмәт резервтары тураһындағы» Указы сығыуҙан алып бөгөнгө көнгә тиклем алып барылған ҙур эшкә анализ бирә.

— Эшселәрҙең культура-техник кимәлен инженер-техник работниктар кимәленә күтәрергә кәрәк. Был бурысты башҡарыусы — аҡыл эше менән физик эш араһындағы айырманы бөтөрөүҙә — хеҙмәт резервтарын йәштән үк һөнәрселек училищеларында тәрбиәләү беҙҙең алға хәрәкәтебеҙҙә сериоҙ аҙым булып тора.

Миллиондарса йәш эшселәрҙә — һөнәрселек училищелары уҡыусыларында хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт тәрбиәләү тәжрибәһен фәнни рәүештә йомғаҡлауға диссертацияның икенсе главаһы арналған. Был главаның эстәлеге бөйөк Лениндең тарихи һүҙҙәре менән билдәләнә: «Бөтә тәрбиә эше, хәҙерге йәштәрҙе уҡытыу һәм өйрәтеү эше уларҙа коммунистик мораль тәрбиәләү булып торорға тейеш».

Мәскәүҙә металлистар әҙерләй торған 14-се номерлы һөнәрселек училищеһы бар. Был училище Советтар Союзында беренсе булып коллектив стахановсы хеҙмәткә күскән «Калибр» заводы базаһында эшләй һәм шул завод өсөн төп кадрҙарҙы әҙерләп бирә. Хәҙер был предприятиелә эшләүселәрҙең 55 проценты һөнәрселек училищеларында уҡып сыҡҡан кешеләр.

Фатима Мостафина үҙенең фәнни хеҙмәте өсөн Мәскәүҙең «Калибр» заводынан һәм заводтың эшселәр отрядын тулыландырыусы 14-се номерлы училищеһынан бик ҡиммәтле материалдар туплаған. Шуның өҫтәүенә ул Башҡортостандағы һөнәрселек училищеларының эш тәжрибәләренән сығып фәнни һығымталар яһай.

Диссертация яҡлағанда сығыш яһаусы ғалимдәр-теоретиктар генә түгел, алдынғы эшселәр ҙә шул фекерҙе раҫланылар. Мәскәүҙең «Калибр» заводында эшләп дан алған мастер — Сталин премияһы лауреаты Николай Российский бына бик ябай һүҙҙәр менән генә әйтте:

— Фатима Хәмитовна заводҡа күрә информациялар йыйнарға ғына килмәне, ә эшсенең йөрәген күрергә, һөйләшергә, ярҙам итергә килә ине. Шуға күрә лә ул һуңғы ике йыл эсендә завод коллективының да, ремесленниктарҙың да дуҫы, яҡын кешеһе була алды. Тап бына шуға күрә лә ул үҙенең фәнни хеҙмәтендә беҙҙең тормошҡа, беҙҙең тәжрибәгә тәрән һәм дөрөҫ анализ бирә алған.

... Ғалимдәр советы Фатима Мостафинаның диссертацияһын бер тауыштан раҫланы һәм уға философия фәндәре кандидаты исеме бирергә ҡарар итте.

Фәндәр кандидаты исеме алыу өсөн диссертация яҡлау — ҙур эштең башы ғына әле. Фән кешеһенең бөтә тормошон талап итә. Халҡыбыҙҙың тоғро ҡыҙы, большевик Фатима Мостафина бөтә тормошон, бөтә көсөн совет фәнен артабан үҫтереүгә бирә. Уның диссертация яҡлауына бер нисә ай ғына ваҡыт уҙҙы әле. Ошо ваҡыт эсендә, ВКП(б) Үҙәк Комитеты аппаратында яуаплы эш башҡарған килеш, ул үҙенең докторлыҡ диссертацияһын әҙерләү хәстәрлеген күрә башланы. Илебеҙҙең ҡеүәтен нығытыу өсөн башҡарылған уның һәр бер эше совет фәненә тейешле вклад булыр.

Ғ. Әхмәтшин.
Мәскәү.

АЛДЫНҒЫ ТӘЖРИБӘЛӘР ТРИБУНАҺЫ

Тарынан юғары урожай алыу агрокомплексе

Өфө районы Фрунзе исемендәге колхоз 1949 — 1950 йылдарҙа ҙур майҙандарҙан һәр гектарға 20 — 28 центнер тары урожайы алыуға өлгәште. Благовар районы «ВЛКСМ-дың 30 йыллығы» колхозында — 28 центнер, Бөрө районы «Ленинский Октябрь» колхозында — 24,8 центнер, Шаран районы «Түңәрәк» колхозында — 22,2 центнер, Әлшәй районы Антонов исемендәге колхозда 25—30 центнер урожай алынды.

Бындай миҫалдар беҙҙә хәҙер бик күп. Был тәжрибәләр беҙҙең алдынғы колхоздарҙың тары культураһын үҫтереү агрокомплексын уңышлы үҙләштереүҙәре тураһында һөйләйҙәр. Бер үк ваҡытта был миҫалдар тарының республикабыҙҙың күпселек райондарында уңышлы үҫә алырлыҡ культура булыуын асыҡ күрһәтеп торалар.

Был культуранан юғары һәм тотороҡло урожай алыуҙы агротехник срокларҙы комплекс рәүештә ҡулланыу хәл итә.

Өфө тәжрибә баҫыуында 1946—1949 йылдарҙа был культураны төрлө агрокомплекстәр ҡулланылған участкаларҙа үҫтереп ҡаралған ине. Бында түбәндәгесә һөҙөмтәләр алынды: һис бер ашлама ҡулланылмаған, туңға һөрөлгән ергә тәҙә ял менән сәселгән участкаьың һәр бер гектарынан 12,6 центнер урожай алынды. Туңға һөрөлгән ергә киң рәтле итеп сәселгән, сабантыйға ҡатоклаған ерҙән — 22,5 центнер, был сараларға өҫтәп ҡар тотоу, ашламалар индереү ҡулланылған ерҙән — 36,4 центнер һәм был һуңғы сараларға өҫтәп орлоҡтары яровойлаштырылып, ағыулап, гранулалы суперфосфат ашламаһы менән ҡатнаштырылып сәселгән ерҙән 42 центнер тары урожайы алынды.

«Түңәрәк» колхозында—(хәҙерге «Сөн» колхозында) һәр бер гектарҙан 22,2 центнер тары урожайы алыу өсөн колхоз тәжрибәсеһе иптәш Сәләхов уны ҡыйҙарҙан яҡшы таҙартылған һәм ашланған ергә киң рәтле итеп, орлоҡтарын ағыулап һәм яровойлаштырып сәсеү үткәрҙе. Рәт араларын йәй буйына ике тапҡыр йомшартты, ә инде рәттәге ҡый үләндәрен систематик рәүештә утап тороуҙы ойошторҙо.

Был тәжрибәләрҙән сығып тары буйынса быйыл да юғары урожай алыуға өлгәшеү өсөн түбәндәге агрокомплексте тәҡдим итәбеҙ.

Был культураның орлоғо ваҡ һәм ул йылы яратыусан. Иң ыңғай шарттарҙа ла уның орлоҡтары ерҙән 10 — 12 көнһеҙ шытып сыға алмайҙар. Шытып сыҡҡас, уның йәш үҫентеләре быуынға һикергәнсе бик әкрен үҫәләр, ул был ваҡытта «тыныслыҡ» осорон кисергән кеүек була. Бына ни өсөн тары, башҡа бөтә төр культураларға ҡарағанда ла, сәселәһе ерҙең ҡый үләндәренән яҡшы таҙа булыуын талап итә. Сүпле ерҙәрҙә уның урожайы йәки бик түбән, йәки бөтөнләй булмай.

Ул ҡороҡлоҡҡа сыҙамлы культура, әммә киң көслө тамыр йәйеп алғарғансы, тупраҡтың дымға яҡшы бай булыуын талап итә торған культура. Ул ергә индерелгән ашламаларға күп өҫтәмә урожай биреү менән яуап бирә.

Һәр бер конкрет агрокомплексте төҙөгәндә тарының бына был үҙенсәлектәрен һәм үҫеү талаптарын бик ныҡ иҫкә алырға кәрәк.

Сәсеү урыны. Тары өсөн иң яҡшы урын булып сиҙәм һәм ҡыртыш ерҙәр, арыш төбө, борсаҡ, әйләндереп һөрөлгән сиҙәм ерҙәре иҫәпләнә. Уны тары төбөнә ҡабатлап, йәки аҡтамыр, эт әсәге, бесәй ҡойроғо, төрлө билсәндәр менән артыҡ ныҡ сүпләнгән ерҙәргә сәсеү ярамай. Быларҙың иң ҡурҡыныслыһы — аҡтамыр. Бындай участкаларға сәскәндә, тары урожай бирмәҫкә мөмкин.

Тупраҡты эшкәртеү. Тары өсөн иң яҡшы, тәрән итеп туңға һөрөлгән ерҙәр иҫәпләнә. Бындай ерҙәрҙе сәсеү башлағансы өҫтән йомшартыу аша ҡыйҙарҙан байтаҡ яҡшы итеп таҙартырға була. Сәсеү алдынан уның тупрағын ҡаҫтарын әйләндермәй генә, 5 — 7 сантиметр тәрәнлегенә генә эшкәртергә кәрәк. Сәсеүгә тиклем тупраҡты яҡшы итеп эшкәртеү, тарыны ҡыйҙарҙан таҙа ергә сәсеү — унан юғары урожай алыуға өлгәшеү тигән һүҙ.

Яҙ һөрөп сәсергә тура килгәндә, һөрөү эше менән һуҡлау һис тә ярамай һәм был эште сифатлы итеп, тик предплужниклы һабандар менән генә үткәрергә кәрәк.

Ашламалар индереү. Тары сәселәһе ергә бик яҡшы серегән тиреҫ серетмәһен, көл, ҡош тиҙәген һәм төрлө минераль ашламаларҙы индерергә мөмкин. Беренсе нәүбәттә орлоҡ участкаларын ашларға кәрәк. Бөтә төр ашламаларҙы ла сәселәһе ерҙе нәүбәттәге культивациялау йәки лущить итеү аҫтына индерергә мөмкин. Бер гектарға 8—10 тонна тиреҫ серетмәһе, 4—6 центнер ҡош тиҙәгенә 2—3 центнер көл ҡушып индерергә була. Минераль ашламаларҙан аммоний сульфатын бер гектарға 1.5 — 2 центнер, суперфосфатты 2 — 4 центнер һәм хлорлы калийҙы 0,75 — 1,2 центнер итеп индерергә мөмкин.

Һуңғы йылдарҙағы тәжрибәләр тары урожайын күтәреүгә гранулалы суперфосфат йәки гранулалы органик-минераль ашламаларҙың ҙур йоғонто яһауҙарын күрһәттеләр. Бындай ашламаларҙы ҡулланыу һәр бер гектарҙан кәмендә 4 — 5 центнер өҫтәмә урожай алыуҙы тәьмин итә. Яҡшы итеп әҙерләнгән гранулаларҙы орлоҡҡа ҡатнаштырып индерергә мөмкин. Бер гектарға: завод гранула суперфосфаты булғанда 50 — 100 килограмм, органик-минераль гранулдары булғанда 200 килограмға тиклем индерелә.

Орлоҡтарҙы әҙерләү. Сәсеү өсөн «Долинское», «Н-Уренское», «Шишма» кеүек юғары урожайлы селекцион сорт һәм урындағы сорт орлоҡтарҙы ғына алырға кәрәк. Орлоҡтар тулы шытымлы, 100 проценты менән таҙа һәм бер тигеҙ эре бөртөклө булырға тейештәр.

Беҙҙең шарттарҙа тары орлоғон яровойлаштырып сәсеү һәр бер гектарҙан 3-4 центнер артыҡ урожай алыуҙы тәьмин итә. Яровойлаштырылған орлоҡтар ерҙең берҙәм һәм 2 — 4 көнгә иртәрәк шытып сығалар, көслө тамыр йәйәләр, тиҙерәк етеп өлгөрәләр һәм эре башаҡлы булалар.

Орлоҡ сәсеүҙән 7 — 10 көн алда 100 килограмм орлоҡҡа 26 литр һыу иҫәбенән еүешләп яровойлаштырыла. Орлоҡ миҫкә, силәк йәки ағасҡа һалып еүешләндерелә, өйөм бейеклеге 30 — 35 сантиметр, һыу икегә бүлеп алына. Башта 100 килограмм орлоҡ 16 литр һыу менән, икенсе тапҡыр 10 литр һыу менән сылатыла, сылатылған орлоҡ 2 сәғәт һайын әйләндерелеп торола. Икенсе тапҡыр сылатҡанда, орлоҡтар формалин менән ағыуландырыла. 40 процентлы формалиндең бер өлөшө 300 өлөш һыуға иретелә, йәғни икенсе тапҡыр сылатыу өсөн алынған һәр бер 10 литр һыуға 32 кубик сантиметр формалин ҡушыла, формалин шыйыҡсаһы менән сылатылған орлоҡ өйөмө 2 сәғәт ваҡытҡа брезент йәки тоҡтар менән ҡаплап ҡуйыла.

Орлоҡ бөтә һыуҙы һеңдереп бөтөргәс иҙәнгә өйөп һалына, уның ҡалынлығы өйөм эсендәге температура һәр ваҡыт 18 — 20 градус йылылыҡта булырлыҡ итеп эшләнә. Ошо хәлдә ул 7 — 10 көн яровойлаштырыла һәм сәсеүгә ярақлы була.

Сәсеү сроктары. Тары йылы ярата торған культура. Уның йәш шытымдары 1-2 градус һалҡынлыҡта өшөп һәлак булыусан. Шуға күрә тарыны уның орлоҡтары ерҙән шытып сыҡҡан ваҡытта туңғаләктар туҡталған булырлыҡ иҫәп менән сәсергә кәрәк була. Беҙҙең ялан һәм урман-ялан райондарҙа яҙғы һуңғы туңғаләктар 30 майҙа — 5 июнда булғылай. Сәселгән орлоҡтар йылы тупраҡ ҡатламына урынлашырға тейеш. Ошо моменттарҙан сығып, беҙ Башҡортостан шарттарында тарыны сәсеү өсөн иң яҡшы агротехник срок итеп 15 — 25 май числоларын иҫәпләйбеҙ. Өфө тәжрибә баҫыуында үткәрелгән күп йыллыҡ һынауҙар түбәндәге һөҙөмтәләрҙе бирҙеләр: 10 майҙа сәселгән ерҙән 10,8 центнер, 15 майҙа сәселгән ерҙән — 17,3 центнер, 20 майҙа сәселгән ерҙән — 22,1 центнер, 25 майҙа сәселгән ерҙән — 26,4 центнер һәм 30 майҙа сәселгән ерҙән — 22,6 центнер тары урожайы алынды.

Сәсеү агротехникаһы. Ер ҡый үләндәренән артыҡ таҙа булған саҡта ғына, тарыны тотош теҙмә юл менән сәсеү ярай. Башҡа ваҡиғаларҙа уны, ат һәм трактор ҡоралдары менән рәт араларын эшкәртерлек итеп, 45 — 53 сантиметр киңлегендә киң рәтле итеп сәсеү кәрәк. Рәттәр бер һәм икә эҙле булырға мөмкин. Орлоҡтарҙы 2 — 4 сантиметр тәрәнлегендә күмдерергә кәрәк. Сәсеү нормаһы: тотош теҙмә юл менән сәсеү өсөн бер гектарға 20 — 25 килограмм, киң рәтле итеп сәсеү өсөн 12 — 17 килограмм.

Тары сәсеүлеген уны сәсеүҙән алда ла һәм сәсеүҙән һуң да катоклау шикһеҙ файҙалы сара булып иҫәпләнә. Был сара орлоҡ күмелгән тупраҡ ҡатламын йылыта, дымды өҫкә күтәрә һәм бер гектарҙан 4 — 6 центнер өҫтәмә урожай алыуҙы тәьмин итә. Шуға күрә тары сәселгән бөтә майҙанда катоклау үткәрергә кәрәк.

Агроном В. Ғирфанов.

Ҡариҙел йылғаһында тәүге ҡаҙ бәбкәләре.

М. Әхмәтйәнов фотоэтюды.

ТЕАТР

Диплом спектакле

Ошо көндәрҙә Башҡорт государство Академия драма театры сәхнәһендә театр училищеһын тамамлап сығыусы дүртенсе курс студенттәренең диплом спектакле булды. Улар Я. Апушкиндең «Салауат» (Ғ. Зөлҡәрнәев тәржемәһе) пьесаһын ҡуйҙылар.

Пьесаны сәхнәгә ҡуйыусы класс педагогы — РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Вәли Ғәлимов тулы ҡанлы, юғары художестволы спектакль тыуҙырыуға күп көс һалған һәм берҙәм ансамбль булдырыуға өлгәшкән. Пьесала ҡатнашыусы выпускниктәр үҙҙәренә тапшырылған ролдәрҙе уңышлы башҡарып сыҡтылар.

Студент С. Ғәлин башҡорт халҡының легендар геройы Салауат Юлаев ролен оҫта, матур һәм көслө темперамент менән башҡарҙы. Ул бөтә картиналарҙа ла образ эсендә йәшәне, пьесалағы ваҡиғаларҙы бөтә күңеле менән тойҙо һәм үҙенең эске кисерештәре менән тамашасыларҙы «үҙ ҡулында тотоп тороу» көҫөк актер искусствоһының культураһына эйә булғанлығын күрһәтте. Уның үҙен сәхнәлә иркен тотоуы, хәрәкәттәрҙең, ҡараштарҙың тамашасыларҙы ышандырырлыҡ булыуы һәм һүҙҙәрҙең асыҡ, тулы, мәғәнәле яңғырауы иптәш Ғәлиндә ҙур ғына мөмкинлектәр барлығын күрһәттеләр.

Салауаттың атаһы старшина Юлай Аҙналин ролен башҡарыусы С. Шәйәхмәтов образды дөрөҫ һәм уңышлы башҡарып сыҡты тиергә мөмкин. Тауыштың етерлек яңғырамауы һәм өлкәнлек сифатының етенкерәмәүе образдың тулы кәүҙәләнеүенә бер ни тиклем ҡамасаулыҡ килтерҙе.

Салауаттың әсәһе Көнбикә ролен башҡарыусы Т. Ибраһимова ролдең бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, уны саф күңелле, тоғролоҡло, ысын мәғәнәһе менән ныҡ сифаттарға бай булған әсә итеп күҙ алдына килтереп баҫтырҙы. Иптәш Ибраһимова уйынында бер ниндәй фальш, яһалмалыҡ һиҙелмәне. Ул тамашасылар тарафынан яратылып ҡаралды.

Ҡолой Балтачев ролендә иптәш Х. Сәлтәрәев сығып яһаны. Ул Ҡолойға ғына хас булған хәйләкәр, ҡаты күңелле, ҡанһыҙ, һатлыҡ йән, эксплуататор характерҙәрен үҙенә туплай алған. Тамашасылар был образда башҡорт халҡының мәкерле һәм ҡан дошманын күрҙеләр.

Яҡим ролен башҡарыусы иптәш И. Вәлиев образдың үҙенә генә хас булған үҙенсәлектәрен таба алған. Был ролдә тамашасыларҙың күҙ алдына үҙенең бөтә тормошон һәм бөтә көсөн халыҡтарҙы азат итеү көрәшенә арнаған ялҡынлы образ килеп баҫты. Иптәш И. Вәлиев был ролдә ҙур оҫталыҡ менән башҡарып сыҡты. Ул үлем моментен күп тәжрибәле профессиональ артистарға хас булған оҫталыҡ менән күрһәтә алды.

Иптәш В. Исхаков Пугачев образын крәҫтиәндәр азатлыҡ көрәшенең ялҡынлы һәм көслө геройын кәүҙәләндерерлек итеп ҡәнәғәтләнерлек уйнай алманы.

Арина шул ваҡыттағы батша самодержавиеһының ҡыҫымына сыҙай алмаған, крепостнойлыҡ ҡоллоғонан ҡотолор өсөн көрәшкә күтәрелгән крәҫтиәндәрҙең изге эшенә йәне-тәне менән ярҙам итергә тырышыусы һәм был көрәшкә ынтылыусы рус ҡатын-ҡыҙҙарының вәкиле булараҡ пьесала ҙур урын алып тора. Ләкин иптәш З. Гәрәева үҙенең мөмкинлектәре булыуына һәм шулай уҡ был ролдең киң диапазонлы булыуына ҡарамаҫтан, азатлыҡҡа, иркенлеккә ынтылыусы рус ҡатыны образын ҡәнәғәтләнерлек кәүҙәләндерә алманы. Был, пьесаның тейешле ритмдә барыуына ла бер ни тиклем кәмселек килтерҙе.

Пьесала ҡатнашыусы М. Вилданова, Ф. Кирәев, Я. Булатов, А. Мостафин, А. Уразметов, В. Наушербанов һәм башҡа иптәштәр үҙ ролдәрен нигеҙҙә дөрөҫ һәм ышанырлыҡ итеп башҡарҙылар.

«Салауат» пьесаһында тулы бер ансамблдең булдырылыуы һәм унда уйнаусы иптәштәрҙең образдарҙы дөрөҫ һәм яҡшы башҡарыуҙары (күрһәтелгән кәмселектәрҙе иҫкә алмағанда), уйындағы тәбиғилек, былар бөтәһе лә училищене тамамлап сығыусы иптәштәрҙең һәм был пьесаны сәхнәгә ҡуйыусы РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Вәли Ғәлимовтың ижади уңыштары булып тора.

Театр училищеһын тамамлаусы иптәштәрҙең, һис шикһеҙ, республикабыҙҙың театраль эшенә, бигерәк тә колхоз-совхоз театрҙарына яңы ҙур көс булып инәсәктәр.

Р. Хөсәйенов.

ҘУР ОТОШ

Нуриман районы государство хеҙмәт һаҡлыҡ кассаһы заем облигацияларын тотоусыларға государство заемдары буйынса байтаҡ суммала отош аҡсалары түләне.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең икенсе Государство заемының һуңғы отош тиражында ғына район связь бүлеге работнигы иптәш Николаева 100 һумлыҡ облигацияға 50 мең һум отто.

Х. Ямаев.

Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы халыҡтан һорау алыуҙы үткәреү буйынса үҙәк комитеттең меморандумы

БЕРЛИН, 17 май. (ТАСС). АДН агентствоһының Дюссельдорфтан хәбәр итеүенә ҡарағанда, ремилитаризациялауға ҡаршы халыҡтан һорау алыуҙы үткәреү буйынса үҙәк комитет 15 майҙа меморандум иғлан иткән. Унда ул Көнбайыш Германияла халыҡтан һорау алыуҙы тыйыуға ҡаршы килә. Был тыйыу конституцияға ҡапма-ҡаршы булып тора. Меморандумдың тексы хат менән бергә Бонн республикаһының президенте Теодор Хейска ебәрелгән. Унда «государство-граждандар именселегенә һәм тыныслыҡҡа һәм халыҡтар араһында үҙ-ара аңлашыуға демократик хоҡуҡҡа» ынтылыуҙа үҙәк комитетте яҡларға саҡырыу бар.

Меморандумда былай тип әйтелә:

«Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда Германия менән тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн халыҡтан һорау алыуҙы үткәреүҙә федераль республика хөкүмәте 1951 йылдың 24 апрелдәге ҡарары менән тыйҙы һәм ремилитаризациялауға ҡаршы халыҡтан һорау алыуҙы үткәреү буйынса бөтә комитеттәрҙе бөтөрөргә бойороҡ бирҙе». Меморандумда хатта федераль республикала йәшәгән хоҡуҡ нормаларынан ҡарағанда ла был тыйыуҙың хоҡуҡһыҙ булыуы күрһәтелә.

Меморандумда, атап әйткәндә, былай тип күрһәтелә: «халыҡтан һорау алыуҙың маҡсаты — Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы ҡарар ҡабул итеү — халыҡ-ара хоҡуҡ һәм конституция менән гарантияланған хоҡуҡ булып тора, тип билдәләргә кәрәк. Германияны демилитаризациялау һәм бөтә төр ремилитаризациялауҙы тыйыу күп кенә халыҡ-ара килешеүҙәрҙә һәм, айырым алғанда, Потсдам килешеүендә билдәләнелгәйне. Потсдам килешеүенә Советтар Союзы, Америка Ҡушма Штаттары һәм Англия ҡул ҡуйғайны һәм һуңлабыраҡ ул шулай уҡ Франция тарафынан раҫланғайны. Потсдам килешеүе, милитаристик Германиянан Европа халыҡтары һәм немец халҡының үҙе тарафынан алынған әсе тәжрибә һөҙөмтәһендә Германияны демилитаризациялау Европа һәм бөтә донъя халыҡтарының тыныс йәшәүе өсөн мотлаҡ шарт булып тора, тип билдәләй. Потсдам килешеүендә унан ары, демилитаризацияланған демократик Германия менән ярашыу договорын төҙөү бер үк ваҡытта тыныслыҡ һәм халыҡтар араһында үҙ-ара аңлашыу эшенә хеҙмәт итә, тип әйтелә.

Халыҡ-ара хоҡуҡҡа нигеҙләнгән Потсдам килешеүендә билдәләнелгән принциптар төп закондың 25-се статьяһына ярашлы рәүештә, шулай уҡ федераль республика хоҡуғының бер өлөшө лә булып торалар. Улар немец закондарынан өҫтөндәр һәм федераль республика халҡының хоҡуҡтарын һәм йөкләмәләрен туранан-тура билдәләйҙәр. Бынан шуны әйтергә кәрәк, Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм Германия менән тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн халыҡтан һорау алыуҙың үҙенең йөкмәткеһе буйынса ғына мәғәнәле булыу түгел, бәлки ул бер үк ваҡытта конституцияның һәм халыҡ-ара хоҡуҡтың тиелмәҫлек принциптәренә лә нигеҙләнә, сөнки ремилитаризациялау тыныслыҡҡа янай һәм тыныс хәл тик тыныслыҡ договоры менән генә гарантиялана ала».

Меморандумда шулай уҡ, Көнбайыш Германия ерҙәренең ҙур күпселегенең конституцияларында халыҡтан һорау алыуҙарҙы һәм референдумдарҙы үткәреү күҙҙә тотолған, тип күрһәтелә.

«Халыҡтан һорау алыуҙы үткәреүгә ҡаршы саралар, — тип әйтелә меморандумда, — государство граждандарының конституция менән билдәләнелгән хоҡуҡтарына ҡул һуҙыу булып тора, төп закондың 4-се параграфының 19-сы статьяһы был хоҡуҡтарҙы һаҡлауҙы гарантиялай. Халыҡтан һорау алыуҙы тыйыу халыҡтан һорау алыуҙың конституцияға ярашлы булған маҡсатын үҙгәртә алмай. Быларҙың бөтәһе лә хөкүмәттең үҙ конституцияһына серьез ҡарамауын иҫбатлай. Быларҙың бөтәһе лә, хөкүмәттең халыҡ ихтыярына ҡарамаҫтан, ремилитаризациялау юлы менән барырға һәм, конституцияны боҙоп, халыҡтың демократик һәм милли хәрәкәттәренә ҡаршы саралар күрергә әҙер тора тигән ҡурҡыуҙы көсәйтә. Шуға күрә федераль республика халҡы төп хоҡуҡтарҙы яҡлауҙы һәм конституцияны хөкүмәттең ҡул һуҙыуынан һаҡлауҙы үҙ ҡулдарына алырға тейеш. Шуға күрә ул немец халҡының милли һәм государство тормошон һаҡлау эшенә һәм Европа һәм бөтә донъя халыҡтарының тыныс үҙ-ара аңлашыу эшенә Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда Германия менән тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн туранан-тура ҡарар итеү юлы менән үҙенең тарихи вкладын индерергә тейеш».

Чехословакия коммунистар партияһының 30 йыллығы

ПРАГА, 17 май. (ТАСС). Чехословакия баш ҡалаһының бөтә газеталары ла 17 майҙа үҙ мәҡәләләрен Чехословакия коммунистар партияһының 30 йыллығына арнағандар. Газеталар был көрәшсе юбилей айҡанлы килгән ҡотлауҙарҙы иғлан итәләр. ВКП(б) Үҙәк Комитетының телеграммаһы баш урында баҫылған, унда былай тип әйтелә:

Чехословакия коммунистар партияһының Үҙәк Комитетына

Туғанлыҡ Чехословакия Коммунистар партияһын уның 30 йыллығы көнөндә ҡайнар ҡотлайбыҙ һәм тәбрик итәбеҙ.

Чехословакия коммунистарына халыҡ демократик төҙөлөштө нығытыу өсөн, тыныслыҡ, демократия һәм социализм эше өсөн көрәштә яңы уңыштар теләйбеҙ.

Советтар Союзы Коммунистар партияһының Үҙәк Комитеты.

* * *

Ҡотлауҙар араһында — туғанлыҡ коммунистар һәм эшселәр партияларының, башҡа партияларҙың һәм Чехословакия республикаһы эшселәр һәм общественный ойошмаларының телеграммалары бар.

Газеталарҙа компартия эшмәкәрләре һәм уның тарихе тураһында күп һанда мәҡәләләр баҫылған.

Францияның Милли собраниеһенә һайлауҙар 17 июнгә билдәләнде

ПАРИЖ, 17 май. (ТАСС). «Журнал офисьел» Францияның Милли собраниеһенә 1951 йылдың 17 июнендә һайлауҙар үткәреү тураһында министрҙәр советы председателенең циркулярен иғлан итте.

БМО Генеральный Ассамблеяһы Политик комитетенең ултырышында

НЬЮ-ЙОРК, 17 май. (ТАСС). 17 майҙа иртән БМО Генеральный Ассамблеяһы Политик комитетының ултырышы булып үтте. Ул Ҡытай Халыҡ Республикаһына тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында Америка резолюцияһын ҡарау өсөн саҡырылды. Был тыйыу тураһында [illegible] индереүсе докладын уҡығандан һуң Советтар Союзы делегаты Я. А. Малик көн тәртибе буйынса һүҙ алды.

Генеральный Ассамблея ҡарамағына ҡуйылған мәсьәлә уның юрисдикцияһына инмәй, сөнки халыҡ-ара тыныслыҡты һәм именлекте [illegible] Берләшкән Милләттәр Уставы Именлек Советына йөкмәтә, [illegible], тине Малик. Ҡушма Штаттар үҙҙәренең агрессив хәрәкәттәрен йәшереү өсөн БМО-ға күп кенә законһыҙ резолюцияларҙы көсләп таҡтылар, тип билдәләне Малик. Генеральный Ассамблеяның Ҡытайҙы «агрессор» итеп иғлан итеү тураһындағы резолюцияһын И. В. Сталин хурлыҡлы резолюция итеп тамғалаңы тип хәтергә төшөрөп, Малик, хәҙерге ваҡытта Ҡушма Штаттар Ҡытайға тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында яңы хурлыҡлы резолюция тәҡдим итәләр, тип күрһәтте.

АҠШ агрессив круггтарының был тыйыуҙы индерергә тырышып яһалған баҫымын арттырыуға ярҙам итеүгә иҫәпләнгән резолюцияны Америка конгресс ашығыс рәүештә ҡабул итте, тип күрһәтте Малик. АҠШ оборона министры Маршалл сенат комиссиялары алдында биргән үҙенең күрһәтмәләрендә, государство департаменты Англия, Франция һәм башҡа илдәр ошо тыйыу тураһында тәҡдимде яҡлап тауыш бирһендәр өсөн уларға баҫым яһаны, тип таныны, тип хәтергә төшөрҙө Малик. Ул, Корея конфликтын тыныс юл менән айға һалыуға АҠШ-тың һәр ваҡытта ҡамасаулыҡ итеүе фактын һуңғы көндәрҙәге ваҡиғалар тағы ла ныҡыраҡ асыҡланылар, тип өҫтәне.

Ҡытай Халыҡ Республикаһына тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында АҠШ тәҡдименең Корейлағы һуғышты киңәйтеү маҡсатын тотҡанлығы асыҡ, тине Малик. Йомғаҡлау һүҙендә Малик, Генеральный Ассамблеяға үҙ алдына ҡуйылған мәсьәләне ҡарарға полномочие бирелмәү айҡанлы совет делегацияһы был мәсьәләне ҡарауҙа ҡатнашмаясаҡ, тип белдерҙе.

Комитет председателе Урданета (Колумбия) көн тәртибе буйынса Маликтең белдереүен тауышҡа ҡуясағын әйтте.

Польша вәкиле Кац-Сухи Малик позицияһын ҡырҡа яҡланы. Кац-Сухи, Алыҫ Көнсығышта АҠШ-тың маҡсаты һуғыш булып тора, тине. Кац-Сухи Политик комитетте Генеральный Ассамблеяның был мәсьәләне ҡарарға хоҡуҡлы булмауын танырға саҡырҙы: һәм Корея конфликтын тыныс юл менән хәл итергә тырышырға саҡырып мөрәжәғәт итте.

Әгәр ҙә комитет был мәсьәләне ҡарауҙы талап итә икән инде, тип өҫтәне Кац-Сухи, Польша делегацияһы уны ҡарауҙа ҡатнашмаясаҡ.

Белорус ССР-ы, Украина ССР-ы һәм Чехословакия вәкилдәре тыйыу тураһындағы тәҡдимде комитеттең законһыҙ ҡарауында үҙҙәренең ҡатнашмаясаҡтары тураһында белдерҙеләр.

Председатель көн тәртибенә ҡарата Малик белдереүен тауышҡа ҡуясағын яңынан әйтте. Ләкин Малик, совет делегацияһы был белдереүҙе тауышҡа ҡуйыуҙы һораманы, тип күрһәтте. Совет делегацияһы, тип белдерҙе Малик, тыйыу тураһындағы мәсьәлә көйөк мәсьәләләрҙең тик Именселек Советы юрисдикцияһына тыйыу индереү көҙҙө тотоусы Устав [illegible] Уларҙы комитетта тикшереүгә бер [illegible] ярамай. Ләкин председатель мәсьәләне тауышҡа ҡуя икән, совет делегацияһы уны бер [illegible] ҡатнашмаясаҡ, сөнки был [illegible] законһыҙ булып тора.

Бер нисә тиклем тикшереүҙән һуң председатель совет вәкиленең [illegible] тауышҡа ҡуймайынса, резолюцияны [illegible] шереүгә күсеүҙе ҡарар итте.

АҠШ вәкиле Гросс Ҡытай Халыҡ [illegible] публикаһын «Берләшкән Милләттәр [illegible] ҡарары агрессияға» буш [illegible] һәйбәтләп, уға тыйыу [illegible] индереү тураһындағы резолюцияны [illegible] «ҡорҡаҡ» булып тора, тип [illegible] ҡарарҙа матапты. Гросс, АҠШ, Англия, Франция, Австралия һәм Венесуэла резолюцияның оператив өлөшөнә төҙәтмә индерҙеләр, тип белдерҙе. Был төҙәтмә [illegible] лай уҡ «стратегик ҡиммәте булған [illegible] териалдарҙы ташыуҙы ла» тыйыуҙы [illegible] ҙә тота.

Унан һуң сығыш яһаған Франция вәкиле Лакост ошо тыйыу тураһында Америка резолюцияһын яҡлауы һәм [illegible] йәнәһе «сикләнелгән маҡсаттарҙы» [illegible] ҙә тота, тип белдерҙе.

Англия вәкиле Джебб, ошо тыйыу тураһындағы мәсьәлә буйынса килеп [illegible] ған айырымлыҡ тик уны индереү ваҡытына ғына ҡағылды, тип раҫланы.

Венецуэла, Гаити, Бразилия, Бельгия делегаттар һәм гоминдансы ошо тыйыуҙы индереү тураһында Америка тәҡдимен яҡланылар.

Индия вәкиле Рау, хәҙерге резолюция Ҡытайҙы «агрессор» тип иғлан итеү тураһында элек ҡабул ителгән резолюцияны артабан үҫтереү булып тора, тип күрһәтте. Индия был резолюцияны Корейлағы мәсьәләне тыныс юл менән айға һалыуға ишектәрҙе яба, тиген [illegible] уға ҡаршы килгәйне, тип күрһәтеп, Рау, тимәк, Индия хәҙер тәҡдим ителгән [illegible] уларға оҡшашлы булған сараларға [illegible] ҡаша алмай, тине. Комитетта бөгөн яһалған сығыштарға ҡарағанда был тыйыу, күрәһең, байтаҡ дәрәжәлә тормошҡа ашырыла ла инде, тине Рау. Шуға күрә резолюцияны ҡабул итеү һуғышты туҡтатыуға булышлыҡ итмәү генә түгел, бәлки уны көсәйтә алыуы асыҡ. Йомғаҡлау һүҙендә Рау резолюция буйынса тауыш биреүҙә ҡатнашыуҙан Индияның тыйылып ҡаласағын белдерҙе.

Унан һуң председатель резолюцияны тауышҡа ҡуйырға теләне. Ләкин Австралия һәм Көньяҡ Африка Союзы делегаттары көндөҙгө ултырышта сығыш яһарға теләүҙәрен белдерҙеләр. Председатель иртәнге ултырышты япты һәм киләһе ултырыштың көндөҙ буласағы тураһында иғлан итте.

* * *

НЬЮ-ЙОРК, 17 май. (ТАСС). Генеральный Ассамблеяның Политик комитеты бөгөн Америка блогы Ҡытай Халыҡ Республикаһына тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында АҠШ резолюцияһын көндөҙгө ултырышта хупланы. Был ҡарар механик күпселек менән ҡабул ителде.

Америка резолюцияһын яҡлап 45 тауыш бирелде. Советтар Союзы, Украина ССР-ы, Белорус ССР-ы, Польша һәм Чехословакия делегаттары тауыш биреүҙә ҡатнашманы.

9 делегат — Афганистан, Бирма, Эквадор, Египет, Индия, Индонезия, Пакистан, Швеция һәм Сирия делегаттары тауыш биреүҙән тыйылып ҡалдылар. Люксембург делегаты ултырышта ҡатнашманы.

МАЛСЫЛЫҠТЫ ҮҪТЕРЕҮ ӨСӨН КӨРӘШМӘЙҘӘР

Салауат районы үҙенең һоҡланғыс болондары, тонок һыуҙы күп йылғалары, һәр төрлө ағасҡа бай урмандары менән республикала дан тотоп килә. Бында игенселек менән бергә, общественный малсылыҡты үҫтереү өсөн бик күп резервтәр бар. Район һуғышҡа тиклем малсылыҡ үҫтереү буйынса Башҡортостандың алдынғы райондарынан һаналып килде. Һуғыштан һуң да общественный малдарҙы үҫтереүҙә байтаҡ уңыштарға өлгәшелде. Малдарҙың дөйөм һаны һуғыштан һуң бик күп артты, уның продукт биреүсәнлеге байтаҡ күтәрелде.

Һуңғы йылдарҙа күп кенә малсылыҡ үҫтереү работниктәре үҫеп сыҡтылар. Һарғамыш совхозының һыйыр һауыусыһы Агриппина Богданова үҙенә беркетелгән 16 һыйырҙан йыл һайын 16 быҙау алып тәрбиәләп үҫтергәне һәм һәр һыйырҙан 2400—2500 литр һөт һауып алғаны өсөн Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды һәм район Советына депутат итеп һайланды. Шулай уҡ Ишбердин исемендәге колхоздың һыйыр һауыусыһы Кәмалова стахановсы эше өсөн Ленин ордены менән, «Урал» колхозының һыйыр һауыусыһы Бикжанова «Почет билдәһе» ордены менән наградланылар. Бындай алдынғы малсылыҡ работниктәре тиҫтәләп һаналалар.

Общественный малсылыҡтың һанын арттырыу һәм уның продуктивлегын күтәреү буйынса Жданов исемендәге колхоздың иптәш Трапезников етәкселек иткән малсылыҡ фермаһы алда бара. Был фермала иң алдынғы, намыҫлы һәм эште белгән колхозсылар эшләйҙәр, улар араһында ныҡлы дисциплина ҡуйылған. Бында зооветеринария ҡағиҙәләре яҡшы һаҡлана, иҫәп-хисап эштәре өлгө булырлыҡ ҡуйылған. Ҡыш көндәрендә аҙыҡ рацион буйынса үлсәп ашатыла. Йәй көндәрендә малдар ауылдан алыҫ тућайға һәм тауҙар араһына күсерелеп, улар тәүлек әйләнәһенә көтөләләр. Һөҙөмтәлә был колхоз һәр йыл һайын малсылыҡ үҫтереү планын арттырып үтәй. Колхоз 1950 йылда ғына малсылыҡтан 130 мең һумдан артығыраҡ доход алды.

Ләкин район бөтә тәбиғи мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан, 1950 йылда малсылыҡ үҫтереү планын, уның бер генә төрө буйынса ла үтәй алманы. Мөгөҙлө эре малдар үҫтереү планы 10 процентҡа үтәлмәй ҡалды. Ә йылҡылыҡ үҫтереү планы бары тик 31 процентҡа үтәлде. Был эш быйыл да һис ҡәнәғәтләнерлек түгел.

Райондың общественный малсылыҡты үҫтереү буйынса серьез артта ҡалыуына нәмә сәбәп һуң? Сәбәп шунда, айырым колхоздарҙың етәкселәре ауыл хужалығының был мөһим тармағына әле булһа иғтибар биреп еткермәйҙәр. Малдарҙың үлеүенә һәм әрәм-шәрәм ителеүенә юл ҡуялар. Малдарҙы ҡышлатыу насар ойошторолә. Райондың колхоздарында мал аҙығы базаһы булдырыуға тейешле иғтибар бирелмәй, ул икенсе сираҡҡа ҡуйыла. Шул арҡала аҙыҡ рационының 75—80 процентын һалам тәшкил итә һәм уны ла әҙерләп ашатыу ойошторолмай. Малдар өсөн йылы һәм яҡты торлаҡтар етешмәй, ферма работниктәре араһында ойоштороу һәм тәрбиәүи эш насар ҡуйылған. «Гудок» колхозы фермаһы мөдире Садриев ферма работниктәре араһында ныҡлы дисциплина урынлаштырыу, ләҙ кәнә үрсем алыуҙы өлгәлә ойоштороу урынына әсселек менән шөғөлләнә. Ҡыш көнө малдарҙың өсәр көн буйы ас һыуыҡ һәм бысраҡ торлаҡтарҙа тотолоуы һөҙөмтәһендә күп кенә мал үлде. Бындай факттар «Әй» һәм Пушкин исемендәге колхоздарҙа ла булды. Ләкин енәйәтселәр әлегәсә яуапҡа тартылғандары юҡ.

Торҡтороу кампанияһын өлгәле үткәреү малдар һанын арттырыуҙа мөһим роль уйнай. Ләкин районда был эш артта ҡалған участкаларҙың береһе. Шул арҡала күп мал ҡыҫыр ҡала. Быйыл Салауат исемендәге колхоз 265 һарыҡтан ни бары 30 бәрәс, 33 инә сусҡанан 5 сусҡа балаһы, Киров исемендәге колхозда 150 һарыҡтан бары тик 3 бәрәс алынды. «Урал» һәм Пушкин исемендәге колхоздарҙа ла бик аҙ үрсем алынды. Быны сәбәбен зоовет работниктәрҙен һәм ферма мөдирҙәренен ғәмһеҙлектәре һәм үҙ эштәренә яуапһыҙ ҡарауҙары менән генә аңлатырға була. Район ауыл хужалығы бүлегенең баш ветврачы Плись һәм баш зоотехник Шәмсетдинов иптәштәр малсылыҡ работниктәренә практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. Иптәш Плись күп ваҡыт кабинетта ғына ултырып «етәкселек» итә.

Малсылыҡты үҫтереүҙә һәм уның продуктивлеген күтәреүҙә мал аҙығы базаһы хәл иткес роль уйнай. Ләкин районда һутлы һәм тамыр аҙыҡтар сәсеү, силос һәм япраҡ аҙыҡтар әҙерләү артта ҡалған участкаларҙың береһе булып тора. Үкенескә ҡаршы колхоздар тамыр аҙыҡтар сәсеүгә быйыл да иғтибар итмәйҙәр. Малсылыҡ фермалары үҙҙәренең баҡсаларын ашҡәртергә керешмәгәндәр һәм күп колхоздарҙа тамыр аҙыҡтар сәсеү өсөн орлоҡтар юҡ.

Районда малсылыҡ продукттары әҙерләү эше лә насар тора, үҙған йыл государствоға ит, һөт, йомортҡа, йөн һәм брынзә тапшырыу планы үтәлмәй ҡалғайны. Был хәл быйыл да ҡабатлана. Беренсе кварталда ит тапшырыу — 70 һәм һөт тапшырыу планы 72 процентҡа ғына үтәлде. Йомортҡа, йөн, брынза һәм башҡа тер продукттар һәм сырьелар әҙерләү эше быйылса башланғаны юҡ әле. «Гудок», Мөхәмәтшин, Молотов, Пушкин һәм Чкалов исемендәге колхоздар государствоға һөт тапшырыуҙың I квартал планын бары 6—8 процентҡа ғына үтәнеләр. СССР әҙерләүҙәр министерствоһының Салауат районы буйынса вәкиле Ханнанов, маслопром управляющийы Пигалев иптәштәр әҙерләүҙәр эше менән йомшаҡ етәкселек итәләр.

Райондың колхоздарында мал торлаҡтарының етерлек булмауы, уларҙы ҡыш көнөндә һыуыҡта тотоу, йәш малдарға йылы урын булмау күп һандағы малдың кәмеүенә килтерә. Ә район Советы исполкомының колхоз ауылы төҙөлөшө бүлеге был эште тейешенсә ойошторғаны юҡ әле. Был бүлек специалистар менән комплектовать ителмәгән. План буйынса 8400 баш мал һыйҙырышлы 55 объект торлаҡ төҙөү, 6 урында кирбес заводы һәм башҡалар төҙөү өсөн 2900 фестметр ағас материалдары һәм 4500 кубометр таш ташыларға тейеш. Ләкин бөгөнгә кенә райондың ни бары 3 кенә колхозы материалдар әҙерләүгә башлағандар. Ә ҡалған 17 колхозда әле булһа төҙөлөш бригадалары булдырылмаған. «Урал», Чкалов, Салауат һәм Пушкин исемендәге колхоздар был эшкә бер генә кеше лә бүлмәгәндәр.

Малсылыҡ работниктәре араһында тәрбиәүи эш ойошторолмаған, фермаларҙа стена газеталары сығарылмай, газета-журналдар уҡыу алып барылмай. Райондың бер генә фермаһында ла социалистик ярыш договорҙары төҙөлмәгән. Молотов исемендәге колхоздың Көсәтәй ауылындағы фермаһында һуңғы ес йыл эсендә бер генә агитатор ҙа булмаған.

Район етәкселәре малсылыҡ өлкәһендәге был серьез етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн йылдам саралар күрергә бурыслылар.

Ш. Хәйруллин.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 17 май. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһенең 17 майҙа тапшырылған белдереүендә, бөтә фронттарҙа ла Халыҡ армияһының частаре, Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Англия-Америка интервенттәре ғәскәрҙәренең контратакаларын уңышлы кире ҡаҡалар, тип әйтелә.

Францияла 1 май демонстрацияһында ҡатнашыусыларҙан үс алыу

ПАРИЖ, 17 май. (ТАСС). Франс Пресс агентствоһы, 16 майҙа Авен ҡалаһында (Нор департаменте) Төньяҡ Африканың Мобеж ҡалаһында (Нор департаменте) беренсе май демонстрацияһы ваҡытында арескә алынған 30 кеше суд булған, тип хәбәр итә.

Авен ҡалаһының суды 8 кешене 30 көндән 45 көнгә тиклем, 19 кешене 8 көндән 20 көнгә тиклем төрмәгә ябыуға хөкөм иткән, 3 кеше аҡланған.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78 48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәләр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02487

Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы.

Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

№ 98 (8815)
1951 йыл
20
МАЙ
йәкшәмбе

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА. В. Ғирфанов. — Агрономия ҡаҙаныштарын пропагандалауҙа яҡшы метод (1-се бит).
С. Байбаков. — Яңы уҡыу йылын яҡшы әҙерлек менән ҡаршылау өсөн (1-се бит).
ПРОПАГАНДИСТӘРҒӘ ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА. М. Журавков. — Совет общество һы үҫешенең ҡәрәкәт иттереүсе көстәре (2-се бит).
В. Кирьянов. — Коммунизм төҙөлөштәренә — юғары сифатлы ағас (2-се бит).
АЛДЫНҒЫ ТӘЖРИБӘЛӘР ТРИБУНАҺЫ. И. Сайган. — «Тәйәләҫ» колхозында йылҡысылыҡ эшо өлгөлө ойоштороласын (2-се бит).
ОБЩЕСТВЕННЫЙ МАЛСЫЛЫҠТЫ ҮҪТЕРЕҮ — ҮҘӘК БУРЫС (2-се бит).
СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. Ә. Шәмсетдинов. — Судьяларҙың халыҡ алдында отчеты (3-сө бит).
Ш. Бикҡол. — Ял йорто (3-сө бит).
СОВЕТ ФӘНЕ КЕШЕЛӘРЕ. Ғ. Әхмәтшин. — Ҙур тарихи этап (3-сө бит).
С. Әлибаев. — Мәктәптәрҙә экзамендәрҙе ойошҡанлыҡ менән үткәрәйек! (3-сө бит).
Ю. Әхмәдиев. — Көнһылыу (4-се бит).
М. Грахов. — Балалар уйынсыҡтары менән сауҙа итеү тураһында (4-се бит).
ДҮРТ ДЕРЖАВА СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРҘӘРЕ УРЫНБАҪАРҘАРЫНЫҢ ӘҘЕРЛЕК КӘҢӘШМӘҺЕ (4-се бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Картоф ултыртыуҙы ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәрергә

Республикабыҙҙың колхоздары, совхоздары һәм МТС-тары быйыл яҙғы сәсеүҙе, үҙған йылға сағыштырғанда, күп уңайлы шарттарҙа алып баралар. Социалистик баҫыуҙарҙа эшләүсе тракторҙар, машиналар паркы күп тулыландырылды. Ошо нигеҙҙә быраса йәшәп килгән ваҡ колхоздар яңы эреләтелгән ауыл хужалығы артелдәренә берләштеләр.

Колхоз, совхоз баҫыуҙарында сәселә торған бойҙай, һоло, арыш культуралары менән бер рәттән, картоф та күренекле урын алып тора, ул ауыл хужалығында ҙур әһәмиәткә эйә. Сөнки ул халыҡ өсөн икенсе икмәк. Иртә культуралар сәсеү эшен тамамлау менән бер рәттән, бөтә урында быға ошо ҡиммәтле культураны ултыртыу эштәрен киң йәйелдерергә кәрәк.

Картоф культураһының удель ауырлығы республикабыҙҙың сәсеү балансында барған һайын үҫә, арта бара. Быйыл был мөһим һәм бик массовый культура, үҙған йылға ҡарағанда, 36 процентҡа күберәк сәселергә тейеш.

Республикабыҙҙың ҡайһы бер райондары иртә культуралар сәсеүҙе уңышлы тамамлап, һуңғы культуралар сәсеү, шул иҫәптән картоф ултыртыу эштәрен йәйелдерҙеләр. Стәрлетамаҡ районы колхоздарында картоф ултыртыу планы үтәлеше 15 майға 30 процент, Ҡырмыҫҡалы районында — 40 процент тәшкил итте. Өфө, Шишмә райондары ла заданиеләрҙе ҡыҫҡа срокта үтәү һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн көрәшәләр.

Агротехника фәненең яңынан-яңы ҡаҙаныштары менән ҡораллана барыусы социалистик баҫыу эшсәндәре бөртөклө ашлыҡ культураларын үҫтереүҙә мөһим камиллаштереүҙәр индергән кеүек, картоф үҫтереү эштәрен дә күп яҡшырттылар. Алдынғы колхоздар, совхоздар һәм МТС-тар сәсеү заданиеләрен һан яғынан ғына үтәп ҡалмайынса, урожайлылыкты күтәреү юлында күп ҡиммәтле сараларҙы тормошҡа ашыралар. Улар нигеҙҙә орлоҡ- [illegible]

ҡулланыу, дөрөҫ тәрбиә булдырыу арҡаһында картофтан бик ҙур рекорд урожай алыуға өлгәштеләр.

Алдынғы эш тәжрибәләрә — яңы уңыштарҙың нигеҙе ул. Бөтә урында хеҙмәттең яңы прогрессив методтарына киң урын бирергә, алдынғы методтарҙы массаларҙың достояниеһе итеү өсөн көрәшергә кәрәк.

Ләкин был сара — алдынғылар өлгөһөндә эшләү, картоф ултыртыуҙы юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн көрәш республикабыҙ колхоздарында, совхоздарында һәм МТС-тарҙа етерлек түгел әле. Быйылғы сезонда картоф ултыртыу өсөн 25 майға тиклемге ваҡыт иң яҡшы агротехник сроктарҙан иҫәпләнә. Ә республикабыҙҙың күп кенә колхоздары, совхоздары, МТС-тары пландың 5 — 10 процентен генә үтәгәндәр. Стәрлебаш, Мишкә, Краснокам, Ҡаңра, Мәсетле һәм башҡа райондар ултыртыу эшенә башламағандар ҙа әле. Был райондарҙың етәкселәре: «әле иртә, көндәр һыуыҡ» тип урынһыҙ тынысланыуға бирелгәндәр. Билдәле, бындай хәл менән һис тә килешеп булмай. Бөтә урында колхоз, совхоз баҫыуҙарында, шулай уҡ эшсе, хеҙмәткәрҙәрҙең ҡала яны участкаларында картоф ултыртыу эшен йәйелдерергә, был эш менән һуңлауға һис бер юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Заданиеләрҙе һан яғынан ғына үтәү өсөн көрәшеү етмәй, уның сифаты өсөн көрәш шулай уҡ төп бурыс итеп ҡуйылырға тейеш. Юғары урожай мастерҙәренең тәжрибәләре күтәренке норма менән ултыртылған участкаларҙа урожайҙың күп юғары булыуы тураһында раҫлайҙар. Шуға күрә кәметелгән нормаларҙа ултыртыуға юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Колхоз, совхоз һәм МТС агрономдары күтәренке нормаларҙың әһәмиәтен аңлатырға, яҡшы сортлы орлоҡтар менән ултыртыуға өндәргә тейештәр. Бының өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлектәр бар, тик уларҙы тулыһынса файҙалана белергә [illegible]

И. В. Сталиндең тел ғилеме мәсьәләләре буйынса хеҙмәтенән сығып, әҙәбиәтте өйрәнеү мәсьәләләре

Ғалимдәр йортонда ғилми сессия

[illegible]

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыу планын срогынан алда үтәү өсөн

Учалы районы «Октябрь» колхозының иптәш Солтанов етәкселек иткән һөтсөлөк-тауар фермаһы работниктәре үҙ-ара ярышып намыҫ менән эшләйҙәр. Колхоз үҙған йылда малсылыҡ үҫтереү һәм малсылыҡ продукттары тапшырыу планын арттырып үтәп, 1951 йылдың I кварталы иҫәбенә байтаҡ продукттар тапшырғайны.

Быйыл да ферма работниктәре малдарҙы өлгөлө ҡышлатып сығарыуға өлгәштеләр. Улар малсылыҡты артабан үҫтереү һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү өсөн конкрет йөкләмәләр алғайнылар. Уларың һүҙҙәре эш менән аҡлана. Быйыл ферма буйынса бөтәһе 100-гә яҡын быҙау алынып, йәш малдар алыу планы арттырып үтәлде.

МТФ-ла күп йылдар буйына һыйыр һауыусы иптәш Ғайсина быйыл да үҙе тәрбиәләгән 12 һыйырҙан 12 быҙау алырға һәм һөт һауып алыу планын арттырып үтәргә һүҙ бирҙе.

Хәҙер фермала государствоға ит һәм һөт тапшырыу пландарын срогында үтәү өсөн көрәш ойошторолдо. Государствоға ит өсөн тапшырыласаҡ малдар һимертеү өсөн айырым көтөүгә ебәрелделәр.

М. Индисамов,
Учалы районы «Октябрь» колхозының партия ойошмаһы секретаре.

Нефть сығарыу участкалары эреләтелә

Ишембай. Сталин премияһы лауреаты А. Кафаров промысла хужалығын яңы структурала төҙөү буйынса тәкдим индергәйне. Был ҡиммәтле тәкдим Ишембай нефтселәре араһында ла ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.

Өсөнсө номерле нефть промыслаһында, ике участканы бергә ҡушып, эреләтелгән участка төҙөлдө. Был яңы участкаға мастер итеп билдәләнеүсе иптәш Бураноголов үҙе лә А. Кафаровтың тәжрибәһен өйрәнеп ҡайтты. Унда алынған тәжрибәләр нигеҙендә ул үҙ эшен яңы методтарға, яңы структураға нигеҙләп төҙөнө.

Уҙғарылған саралар был эреләтелгән участканан 17 кешене башҡа эшкә күсереү мөмкинлеген бирҙе. Был үҙе үк йылына 138 мең һумлыҡ экономия бирәсәк. Ә эреләтелгән участканың бөтә экономияһы йылына 201 мең 600 һум тәшкил итергә тейеш.

Б. Морзағәлиев.

Утау эштәре башланды

Туймазы районы Хрущев исемендәге колхоз (председателе иптәш Минһажев) быйыл яҙғы сәсеүҙе ҙур ойошҡанлыҡ менән үткәрҙе. Ҡара бойҙайҙан башҡа, бөтә төр культуралар сәсеү планы 15 майға арттырып үтәлде. Тары 32 гектар урынына 62 гектар сәселде. Күп йыллыҡ үлән сәсеү планының үтәлеше 170 процент тәшкил итте. Колхозда картоф һәм силос культуралары сәсеү эштәре лә тамамланды. Ҡара бойҙай сәсеү өсөн 55 гектар ер әҙерләнде.

Иптәш Нурмөхәмәтов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы социалистик ярышта еңеүсе булып сыҡты, уға колхоз правлениеһенең күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде. Сәсеүсе Вәлиев көндәлек эш нормаһын 150 — 180 процентҡа үтәне.

Хәҙер колхозда ужым культуралары утала башланы. 278 гектар майҙандағы арыш сәсеүлеге ҡый үләндәренән таҙартылды инде. Шулай уҡ пар һөрөү эштәре лә ҡыҙыу темп менән бара. 274 гектар пар һөрөү планы 25 майға үтәләсәк.

Ф. Миңлеиәева.

Агрономия ҡаҙаныштарын пропагандалауҙа яҡшы метод

Ауыл хужалығы министерствоһының пропаганда управлениеһе колхоз председателдәре, бригадирҙәре, звено етәкселәре һәм специалистәр өсөн ярҙамға агротехник консультациялар баҫып сығара башланы. Был консультацияларҙың ҡиммәтлеге шунда, улар бәләкәй генә форматтарҙа, 3, 5, 6 битлек брошюра-листовка формаһында баҫып сығарылалар. Һәр бер листовка алдынғы агротехника сараларының береһенә арналған була. Улар 3000 — 5000 дана итеп баҫтырылалар һәм бушлай колхоздарға таратылалар.

Апрель айында управление 13 исемдә листовка баҫып таратты, былар бөтәһе лә яҙғы сәсеү эштәренә һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү мәсьәләләренә арналғандар. Листовкалар араһында «гранул ашламалары, уларҙы әҙерләү һәм файҙаланыу техникаһы», «Ужым культураларын тәрбиәләү», «Яҙғы бойҙайҙы сәсеү агротехникаһы», «Күп йыллыҡ үләндәрҙе сәсеү һәм тәрбиәләү», «Колхоздарҙа тәжрибә эштәрен ойоштороу» кеүек темалар бар.

Консультациялар баҫыусылыҡ тәжрибә станцияһының квалификациялы ғилми сотрудниктәре тарафынан яҙылғандар. Һәр бер консультация теманың, агротехник сараның әһәмиәтен ҡыҫҡаса яҙыуҙан башлана, унан һуң был сараны ҡулланыуҙан алынған файҙалы йөғөнтө күрһәтә торған алдынғылар тәжрибәһе һәм ғилми учреждениеларҙың ҡаҙаныштары килтерелә. Листовканың дүрттән өс өлөшө теге йәки был агротехник сараны нисек итеп үтәү техникаһын өйрәтеүгә арналған. Консультацияны был формала биреү уңышлы метод, тип әйтергә кәрәк. Айырым бер агротехник сараны былай тулыһынса аңлатып биреү һәм уны ошо сара үткәрелеү алдынан һәр бер колхозсы уҡырлыҡ формала бөтә колхоздарға илтеп еткереү—быны агрономия ҡаҙаныштарын пропагандалауҙа уңышлы метод тип атарға була.

Был беренсе генә аҙым әле. Апрель айының листовкалары ауыл хужалығы эштәренең иң мөһиме — яҙғы сәсеүҙе юғары агротехника кимәлендә үткәреүгә арналғандар. Ләкин бының менән генә сикләнеп ҡалыу ярамай. Уңышлы тәжрибәне дауам иттереп, яҡын киләсәктә бындай агротехник консультацияларҙы яҙғы һәм көҙгө эштәргә ҡарата ла, общественный малсылыҡты артабан күтәреүгә арналған зооветеринария консультациялары ла биреү эшен ойошторорға кәрәк. Һис шикһеҙ, был консультацияларҙың, бер өлөшө алдынғыларҙың эш методтарын пропагандалауҙан торорға тейеш.

Консультацияларҙың беренсе серияһы тик рус телендә генә баҫылғандар. Ләкин был ғына етмәй. Улар менән колхозсылар массаһы киң файҙаланһындар өсөн бындай консультацияларҙы артабан башҡорт телендә лә баҫтырыуҙы ойошторорға кәрәк.

Агроном **В. Ғирфанов.**

Һынауҙар һәм экзамендәр ойошҡанлыҡ менән үтәсәк

Өфө ҡалаһы 45-се номерле ҡыҙҙар урта мәктәбендә (директоры иптәш Миронова) быйыл һынауҙар һәм экзамендәр юғары кимәлдә үткәреләсәк.

Бында бөтәһе 48 класс иҫәпләнә. Ул кластарҙа 1724 бала уҡый. Һынауҙар һәм экзамендәр 39 класта үткәреләсәк. Был мөһим эште уңышлы уҙғарыу өсөн мәктәп коллективы бөтә көсөн һала. Уҡытыусылар менән берлектә бер нисә тапҡыр ата-әсәләр йыйылышы булып үтте. Шулай уҡ уҡыусыларҙың дөйөм йыйылышы уҙғарылды. Был йыйылыштарҙа тик бер мәсьәлә — быйылғы уҡыу йылын уңышлы тамамлау мәсьәләһе тикшерелде.

Мәктәптең һынауҙарға инәсәк кластарында үткәндәрҙе ҡабатлау ойошторолдо. Өҫтәмә дәрестәр һәм консультациялар, шулай уҡ һынау һәм экзамендәргә әҙерлек буйынса докладтар, беседалар үткәрелә. Был эштә бигерәк тә математика уҡытыусылары Ахмайлов, Кочурнова, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылар Глушкова, Моисеенко, башланғыс мәктәп уҡытыусылары Быкова, Редникова һәм башҡа иптәштәр актив ҡатнашалар.

Бер нисә тапҡыр пионер отрядтәренең тематик сборҙары булып үтте. Унда «Башҡортостандың байлыҡтары», «Башҡорт халҡының тарихи үткәндәре» һәм башҡа географик һәм тарихи темаларға докладтар тыңланды. Был саралар уҡыусыларға айырым предметтәр буйынса үткәндәрҙе ныҡытыу өсөн ҙур ярҙам итәләр.

Һынауҙар өсөн билеттәр әҙерләнде һәм расписание төҙөлдө.

Мәктәп библиотекаһы һынауҙарға яраҡлы булған бөтә материалдарҙы һайлап алды, төрлө тематик витриналар ойошторҙо. Был витриналарҙа уҡыусылар өсөн яҡшы кәңәштәр бирелә.

Стена газеталары регуляр сығарыла. Унда уҡытыусылар һәм уҡыусылар үҙҙәренең ҡыҫҡа ғына хәбәрҙәрендә эстәлекле һәм файҙалы сығыштар яһайҙар. Һынауҙарға әҙерлек буйынса үҙҙәренең тәжрибәләре менән уртаҡлашалар.

Быйыл мәктәпте тамамлаясаҡ 10-сы класс уҡыусылары араһында экзамендәргә әҙерлек эше айырыуса ойошҡанлыҡ менән бара. Мәктәп күләмендә өс 10-сы класс бар. Был кластарҙа бер генә өлгәшмәүсе лә юҡ. Бында күпселек уҡыусылар тик «4» һәм «5» билдәләренә генә уҡыйҙар.

Һынауҙарға әҙерлектә мәктәптең төрлө уҡыу кабинеттәре ҙур ярҙам күрһәтәләр. Физика, химия һәм биология кабинеттәрендә һәр көндө уҡыусылар тулы була. Бында улар үҙҙәренең теоретик белемдәрен практик рәүештә ныҡлы үҙләштерәләр.

Мәктәп коллективы дүртәйләләрҙең патриотик саҡырыуын хуплап ҡаршы алды. Яңы уҡыу йылына әҙерлек эше тағы ла киңерәк йәйелдерелде. Хәҙер ягыулыҡ, класс һәм кабинет мебелдәре, уҡыу әсбаптары, күргәҙмә пособиелар һәм башҡа кәрәк-яраҡтар булдырыу эше башланды.

А. Баязитов.

Оборудованиеләр социалистик һаҡлыҡҡа алынды

Маҡар район типографияһы работниктәре, өлкә газета-журналдар типографияһы эшсеһе иптәш Вафин өлгөһөндә, оборудованиеләрҙе социалистик һаҡлыҡҡа алдылар. Һөҙөмтәлә оборудованиеләрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге байтаҡ күтәрелде. Наборщица Ғәзизова һәм Сладкова, печатница Ғәлиева иптәштәр айырыуса ҙур эш күрһәткестәренә өлгәшәләр. Улар үҙ нормаларын 125—150 процентҡа үтәйҙәр.

З. Низамов.

Хеҙмәт резервтары мәктәптәрендә экзамендәр башланды.

Һүрәттә: Черниковск ҡалаһының өсөнсө номерле һөнәрселек училищеһендә уҡыусыларҙан бер төркөм экзамен биреү ваҡытында. Алда — (һулдан уңға) һөнәрселек училищеһенең директоры А. Кузнецов, уҡытыусы Н. Калинина уҡыусы Анатолий Шлевкиндән экзамен алалар.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Яңы уҡыу йылын яҡшы әҙерлек менән ҡаршылау өсөн

Шаран районының халыҡ мәғарифе работниктәре дүртәйләләрҙең мөрәжәғәтен ҙур күтәренкелек менән ҡаршы алдылар. Экзамендәргә әҙерлек алып барыу менән бергә, 1951/52 уҡыу йылын достойн ҡаршылау өсөн мәктәп мөдирҙәре һәм директорҙары, ауыл Советтәре исполкомдары һәм колхозсылар ҙур хәстәрлек күрәләр. Уҡыу йәшендәге балаларҙың иҫәбе алына, уларҙың ата-әсәләренә СССР Министрҙәр Советының дөйөм мәжбүри ете йыллыҡ уҡыу хаҡындағы ҡарары аңлатыла, конференциялар үткәрелә.

Районның күп кенә мәктәптәрендә яңы уҡыу йылын яңы өлгәшеүҙәр менән ҡаршылау өсөн әҙерлек эштәре башланды. Аҡбарыҫ урта мәктәбендә (директоры Сафиуллин) йыл буйына етерлек утын, ремонт өсөн кәрәкле төҙөлөш материалы әҙерләнеп, килтереп ҡуйылды. Ташлы, Нөрөй, Ерекле һәм Шаранбаш-кнәз ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәрендә лә утын, төҙөлөш материалдары әҙерләү, уларҙы ташыу эштәре яҡшы бара. Был ауыл Советтәренең исполкомдары халыҡ мәғарифенә ҙур иғтибар итәләр.

Уҡытыусылар балалар ярҙамында мәктәп баҡсаларына ағас ултырттылар, йәнле тәбиғәт мөйөштәрен байытыу, йыһазландырыу буйынса күп кенә эштәр башҡарылды. Ҡарьяуҙы ете йыллыҡ (директоры Байбаков), Ерекле урта мәктәптәренең (директоры Бакиров) баҡсалары быйыл яҙ тағы ла төрләндерелде һәм байытылды. Дүртәйлә урта мәктәбендә физика, биология кабинеттәре йыһазландырылды.

Үҙ-ара һалым һәм бюджет аҡсалары иҫәбенән быйыл 13 мәктәпкә капиталь һәм 56 мәктәп бинаһына ағымдағы ремонт үткәреләсәк. Ә Нартаҫты ауылында ете йыллыҡ мәктәп өсөн стандарт биналар һалынасаҡ, уҡытыусылар өсөн торғыҙ квартира эшләнәсәк. Хәҙер бөтә 102 мәктәптә лә ремонт өсөн материалдар әҙерләнә, утын ҡырҡыла.

Беҙ 1951/52 уҡыу йылын тулы әҙерлек менән ҡаршылап, уҡыу-уҡытыуҙың сифатын артабан күтәрербеҙ.

С. Байбаков,
Шаран районы мәғариф бүлеге мөдире.

* * *

Архангель районының Абзан урта мәктәбе коллективы Дүртәйлә хеҙмәтсәндәренең саҡырыуына ҡушылып, яңы уҡыу йылына әҙерләнә башланы.

Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 20 парта, күп кенә өҫтәл, ултырғыс, шкаф һатып алынды, һәм уҡыу пособиелары булдырылды. Колхозсылар ярҙамы менән 130 кубометр утын әҙерләнеп мәктәп ихатаһына ташып ҡуйылды. Хәҙер мәктәп бинаһының стеналарын штукатурлау һәм мейестәрен ремонтлау өсөн материал әҙерләнә.

Н. Нәжметдинов.

Торф әҙерләйҙәр

Быйыл Кушнаренко районындағы торф сығарыу предприятиеһендә торфты ер аҫтынан сығарыу өсөн махсус машина эксплуатацияға тапшырылды. Бригадир Аҡбашев, локомобиль машинисы Федоров һәм башҡа иптәштәрҙең фидакәр хеҙмәттәре арҡаһында, был машинаны монтажлау срогынан 5 көн алда тамамланды. Хәҙер ул юғары сифатлы торф сығара. Торф сығарыусылар һәм сменалар араһында социалистик ярыш йәйелдерелде. Социалистик ярышта стельщицалар Ф. Мөхтәрова, Е. Борисова, подкладщица З. Кузнецова, кисе техник А. Плотникова һәм башҡа иптәштәр юғары хеҙмәт күрһәткестәренә өлгәшәләр. Улар көн һайын смена заданиеләрен уңышлы үтәйҙәр. Хәҙер 100 тоннаға яҡын торф әҙерләнде лә инде.

1951 йылда был предприятие 5 мең тонна торф сығарырға тейеш. Коллектив уны ике тапҡырға арттырып үтәргә йөкләмә алды һәм Дәүләкән, Черниковск торф сығарыу предприятиеләрен социалистик ярышҡа саҡырҙы.

С. Гәрәев,
ВЛКСМ-дың Кушнаренко райкомы секретаре.

Почетлы бурысты намыҫ менән үтәйҙәр

Бәләбәй районы Булганин исемендәге эреләтелгән колхозда аттар ҡарауысы иптәш Сәхәб Фазлетдинов йыл һайын уҙена беркетелгән бейәләрҙән ҡолондарҙы тулыһынса алып, үҫтереп килә. Ул быйыл 11 бейәнән 11 ҡолон алып, уларҙы яҡшы тәрбиәләп үҫтерҙе.

Был колхоз общественный малсылыҡты үҫтереүҙең 3 йыллыҡ планын районда беренсе булып үтәп, ВКП(б) район комитеты һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алды.

Шулай уҡ райондағы «Красный Октябрь», Поскребышев, Чапаев исемендәге колхоздар ҙа малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын үтәнеләр.

Н. Абдуллин.

ПРОПАГАНДИСТӘРГӘ ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА

Совет обществоһы үҫешенең хәрәкәт иттереүсе көстәре

Большевиктәр партияһының етәкселегендә, иптәш Сталин юлбашсылығында — совет халҡының социализм төҙөүҙә өлгәшкән бөйөк уңыштары беҙҙең илебеҙҙә эксплуататор синыфтарҙы бөтөрөүгә килтерҙе. Беҙҙең обществола совет халҡының ҡаҡшамаҫ мораль-политик берҙәмлеге барлыҡҡа килде.

Совет халҡының тыныс төҙөлөш осоронда, шулай уҡ һуғыш ваҡытында өлгәшкән уңыштары шуны иҫбатланы: социалистик ҡоролош халыҡ энергияһының бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанаҡтарын асты, бөтә етештереү көстәренең иң тыҙыу үҫешен тәьмин итте, кешеләрҙең тәбиғәт өҫтөнән власен көсәйтеүгә йүнәлгән иң тәүәккәл пландарын һәм уйҙарын тормошҡа ашырыуға ерлек тыуҙырырға һәләтле булды.

Марксизм беренсе тапҡыр тарихтең хәрәкәткә килтереүсе көстәрен, йәғни кешеләрҙең ҙур массаһын, бөтә халыҡтарҙы, синыфтарҙы дауамлы хәрәкәткә килтереүсе көстө кешеләрҙең баштарынан түгел, ә обществоның етештереү ысулдарынан эҙләргә кәрәк, тип күрһәтте. Етештереү ысулы общество тормошоноң төп билдәләүсе көсө булып тора, тик ул һәр бер общество-экономик формацияның хәрәкәт иттереүсе көстәренең характерын һәм үҙенсәлеген аңларға мөмкинлек бирә.

Хосуси милк хөкөм һөргән һәм кешенең кеше тарафынан эксплуатацияланыуына нигеҙләнгән капиталистик обществола етештереү ысулдары антагонистик характерҙа булалар, үҫә барыусы етештереү көстәре етештереү мөнәсәбәттәренә ҡапма-ҡаршы киләләр. Килешелмәҫлек синфи көрәш бындай обществола тарихтең хәрәкәт иттереүсе хәл иткес көсө булып тора. Был синфи көрәш етештереү общественный характерҙа, ә үҙләштереү хосуси формала булыуының ҡаршылыҡтарын сағылдыра. Был көрәш социаль революцияларҙың нигеҙе булған асыҡтан-асыҡ конфликтҡа үҫеп әүерелә.

Етештереү көстәренең характеры менән етештереү мөнәсәбәттәре араһындағы капитализмға хас булған килешенмәҫлек ҡаршылыҡтар әленән-әле ҡабатлана торған артыҡ етештереү кризистәрендә, һуғыштарҙа, эшһеҙлектә кәүҙәләнәләр.

Социалистик общество антагонистик ҡаршылыҡтарҙан азат. Бында общественный тормош аренаһына хәрәкәт иттереүсе яңы ҡеүәтле көстәр барлыҡҡа килә.

* * *

Большевиктәр партияһының политикаһын тормошҡа ашырыу — социализмдең бөтә еңеүҙәренең нигеҙе ул. Донъяла үҙенең политикаһы, донъяға ҡараштары халыҡ араһында киң танылған һәм таралған большевиктәр партияһы кеүек, икенсе бер партия юҡ. Партия үҙенең политик етәкселеген марксизм-ленинизм нигеҙендә, общественный үҫеш закондарын тәрән белеү нигеҙендә тормошҡа ашыра.

Партиябыҙ, тип күрһәтте Ленин, общественный үҫеш закондарын үҙләштереп, «тамырҙан социаль үҙгәрештәр яһау өсөн кәрәкле сроктарҙы билдәләүҙең тарихта һирәк осрай торған ваҡиғаһына» эйә булды һәм «беҙ хәҙер биш йыл эсендә нимә эшләргә мөмкин икәнлеген һәм ни өсөн тағы ла күберәк сроктар кәрәк икәнлеген асыҡ күрәбеҙ», (Әҫәрҙәр, XXVII том, 403-сө бит).

Большевиктәр партияһының политикаһы, совет ҡоролошоноң тормош нигеҙе булған хәлдә, социалистик экономиканың ғына түгел, ә совет обществоһының идеологияһының бөтә формаларының — фән, искусство, социалистик правоның да үҫешенә йүнәлеш бирә. Идеологик мәсьәләләр буйынса ВКП(б) Үҙәк Комитетенең ҡарарҙары һәм иптәш Сталиндең күрһәтмәләре совет культураһының яңы күтәрелешен тәьмин иттеләр, совет философияһына, биологияһына, физиологияһына, тел ғилеменә, совет искусствоһына һәм культурабыҙҙың башҡа өлкәләренә алға табан ҙур [illegible]

[illegible]

түгел, ә төп етештереү средстволарының да эйәһе булып тора. Был уның илдең ойоштороу-хужалыҡ тормошонда государствоның хәл иткес роль уйнауын билдәләй. Совет государствоһының хужалыҡ-ойоштороу эшмәкәрлеге бына шуға нигеҙләнә. Совет государствоһы хужалыҡҡа планлы етәкселектә общественный байлыҡты арттырыу, хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күрешен яҡшыртыу һәм культура кимәлен күтәреү, СССР-ҙың оборонаға һәләтлелеген нығытыу интересарында тормошҡа ашыра.

Социалистик хужалыҡҡа планлы етәкселек иткәндә, беҙҙең государствобыҙ общественный үҫештең аңлап-беленгән закондарына таяна. Ул производствоның өлгәшелгән кимәлен иҫәпкә ала, темпты тиҙләтеү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе иҫәпкә ала, хужалыҡты алып барыуҙа социалистик системаның бөтә өҫтөнлектәрен файҙалана.

Совет государствоһының хужалыҡ-ойоштороу эшмәкәрлеге менән уның культура-тәрбиәләү эше айырылмаҫлыҡ бәйләнгән. Совет государствоһы һәм уның органдары аша большевиктәр партияһы социалистик культураның үҫешенә етәкселек итә, халыҡты коммунизм рухында тәрбиәләүҙе тормошҡа ашыра, бөйөк тарихи бурысты — бөтә хеҙмәтсәндәрҙе лә белемле һәм культуралы кешеләргә әйләндереү, эшсе һәм крәҫтиәндәрҙең культура-техник кимәлен аҡыл хеҙмәте работниктәре кимәленә күтәреү бурысын хәл итә.

Иптәш Сталин государство тураһында, яңы общество ҡоролошон нығытыуҙа, коммунизмдең еңеүе өсөн көрәштә уның роле тураһында бер бөтөн һәм тамамланған учение тыуҙырҙы. Иптәш Сталин: социализмдан коммунизмға күсеүҙең бөтә осоро өсөн государство кәрәк, әгәр ҙә капиталистик ҡамау һаҡланһа һәм йәшәй торған булһа, коммунизм осоронда ла государство булыр, тип өйрәтә. Иптәш Сталин партияны, халҡыбыҙҙы тыныслыҡ һәм социализмдең таянысы, беҙҙең илдә коммунизм төҙөүҙең ҡеүәтле ҡоралы булған Совет государствоһын бөтә яҡлап нығытырға өйрәтә.

Шулай итеп, Совет социалистик государство совет обществоһы үҫешенең хәрәкәт иттереүсе иң мөһим көсө, коммунизм төҙөүҙә төп ҡорал булып тора.

* * *

СССР-ҙа социализмдең еңеүе партия һәм Совет государствоһының бөйөк триумфы булып тора. Социализмдең еңеүе һөҙөмтәһендә совет обществоһының бөтә социаль ҡоролошо тамырынан алып үҙгәрҙе. Совет социалистик общество эшселәрҙең, крәҫтиәндәрҙең, интеллигенцияның дуҫтарса хеҙмәттәшлек итеүе картинаһын кәүҙәләндерә. «Совет обществоһының, — тип күрһәтте иптәш Сталин партияның XVIII съезында, — мораль-политик берҙәмлеге, СССР халыҡтарының дуҫлығы, совет патриотизме кеүек шундай хәрәкәт иттергес көстәре ошо ерлек нигеҙендә йәйелделәр ҙә» («Ленинизм мәсьәләләре», 11-се баҫма, 589-сы бит).

Совет обществоһының хәрәкәт иттереүсе көсө булыу яғынан мораль-политик берҙәмлек эшселәр, крәҫтиәндәр һәм интеллигенция тәрән хеҙмәттәшлек итеп бергәләп коммунизм төҙөүҙәрендә кәүҙәләнә. Был берҙәмлек коммунистәр партияһы идеологияһының бөтә совет халҡы идеологияһына әүерелеүен кәүҙәләндерә. СССР-ҙа халыҡ һәм коммунизм берҙәм һәм ҡаҡшамаҫ көскә берләшкәндәр.

Совет халҡы берҙәм, уны синфи интерестәр ҙә, политик һәм әхләҡи ҡараштар ҙа айырмай. Тап бына ошо интерестәрҙең, идеялрҙың, әхләҡи ҡараштарҙың берҙәмлеге совет халыҡтарын хәрәкәт иттерә, уларҙы гүзәл эштәргә һәм героик подвигтәргә рухландыра. Бөтә совет обществоһының синфи структураһын үҙгәртеү, уның төп синыфтарының — эшсе һәм крәҫтиәндәрҙең — тәбиғәттәре үҙгәреү ар- [illegible]

[illegible]

совет обществоһының ҡеүәтле хәрәкәт иттергес көсө булып үҫте.

Беҙҙең обществоның хәрәкәт иттереүсе көсө булған СССР халыҡтарының дуҫлығы ҡайнар һәм йәшәү көсө биреүсе совет патриотизме менән айырылмаҫлыҡ бәйләнгән.

«Совет патриотизменең көсө шунда, — тине иптәш Сталин, — ул раса йәки милли хәрәкәттәргә түгел, бәлки халыҡтың үҙ Совет Тыуған иленә ысын күңелдән бирелгән һәм тоғро булыуына, илебеҙҙәге бөтә милләттәр хеҙмәтсәндәренең туғанлыҡ дуҫлығына нигеҙләнгән. Совет патриотизмында Советтәр Союзындағы халыҡтарҙың милли традициялары һәм ундағы бөтә хеҙмәтсәндәрҙең тормош өсөн иң мөһим уртаҡ интерестәре гармониялы рәүештә бергә ҡушыла. Совет патриотизме илебеҙҙәге бөтә милләттәрҙе һәм халыҡтарҙы айырылыштырмай, бәлки, киреһенсә, берҙәм семья итеп туплай. Советтәр Союзындағы халыҡтарҙың ҡаҡшамаҫ һәм нығыҙан-нығый барған дуҫлығының нигеҙҙәре бына ошондай» («Советтәр Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында», 160—161-се биттәр).

Совет патриотизме йөҙөнтөлө характерҙа. Бөйөк Ватан һуғышы көндәрендә ул совет кешеләренең массовый героизменең бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанағы, уларҙың фронтта һәм тылда тиңдәшһеҙ подвигтәренең сығанағы булды.

Һуғыштан һуңғы осорҙа социализмдең хәрәкәт иттереүсе көсө булған совет патриотизме совет кешеләренең хеҙмәт активлығында, социалистик ярыштың массовый төҫ алыуында бығаса күрелмәгән көс менән кәүҙәләнә.

Тарихта беренсе булараҡ, социализм илендә етештереү көстәре менән етештереү мөнәсәбәттәренең тулыһынса ярашыуы барлыҡҡа килә. Етештереү көстәренең общественный характерҙа булыуы етештереү мөнәсәбәттәренең общественный характерҙа булыуы менән тулылана. Шул арҡала етештереү көстәре үҙенең үҫеше өсөн тулы һәм иҫкеһеҙ-сикһеҙ киңлек ала, хеҙмәтсәндәрҙең социалистик аңы, уларҙың активлығы һәм инициативаһының үҫеүе өсөн ныҡлы нигеҙ һалалар. «Эшселәрҙең капиталистарға түгел, бәлки үҙ государствоһына, үҙ синыфына эшләүҙәрен аңлауҙары, — был аң беҙҙең промышленностебеҙҙе үҫтереү һәм камиллаштереү эшендә өлкән хәрәкәт иттергес көс булып тора» (И. Сталин, 10 том, 119-сы бит). Был аң массаларға эйә булып, уларҙың ижади активлығында кәүҙәләнеп, совет обществоһының хәрәкәт иттереүсе көсөнә әйләнде.

Совет обществоһы ла, бөтә башҡа общество кеүек үк, яңы, прогрессив, алға барыусы көстәр менән иҫке, ғүмере бөткән көстәр араһында көрәш нигеҙендә үҫә. Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит итеү эштәге етешһеҙлектәргә, кешеләрҙең аңында капитализм ҡалдыҡтарына ҡаршы көрәштә большевиктәр партияһының, совет халҡының ҡеүәтле ҡоралы булып тора.

Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит юғарынан торып ҡына, етәкселек итеүселәр тарафынан ғына түгел, бәлки түбәндән торып та, киң хеҙмәтсән массалар тарафынан да тормошҡа ашырыла.

«Әйҙә партиябыҙ, большевиктәр, илебеҙҙең бөтә намыҫлы эшселәре һәм хеҙмәтсән элементтәре беҙҙең эштәге етешһеҙлектәрҙе, беҙҙең төҙөлөштәге етешһеҙлектәрҙе асып һала бирһендәр, — тип саҡыра иптәш Сталин, — беҙҙең эштә һәм беҙҙең төҙөлөш эшендә туңып ҡалыу, һаҙлыҡ, серәүҙәр булмаһын өсөн, бөтә булған эшебеҙ, бөтә төҙөлөшөбеҙ көндән-көн яҡшырһын, һәм уңыштарҙан уңыштарға барһын өсөн беҙҙең етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙең юлдарын күрһәтһендәр» (Әҫәрҙәр, 11 том, 30-сы бит).

Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит итеү — аскыс, — ти иптәш Сталин, — был аскыс ярҙамында беҙ социалистик төҙө- [illegible]

[illegible]

М. Журавков,
философия фәндәре кандидаты.

Өфө телефон аппараттары заводы коллективе Сталинград һәм Куйбышев гидроэлектростанциялары төҙөлешенең заказдарын стахановсы вахтаға баҫып үтәй.

Һүрәттә: слесарь-йыйнаусылар бригадаһы бригадиры А. М. Гагин эш өҫтөндә. Ул яҡшы сифатлы продукция бирә һәм көндәлек нормаһы 300 процентка үтәй.

А. Чарвинский фотоһы.

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНӘ — ЮҒАРЫ СИФАТЛЫ АҒАС

Беҙҙең леспромхоз коллективе социалистик ярышта һәр ваҡыт еңеүселәр иҫәбендә тора. Ул ағас әҙерләү һәм ташыу планын быйыл срогынан алда үтәне. Тыуған илгә пландан тыш 2 мең кубометр юғары сортлы төҙөү материалдары бирелде. Беҙ һал ағыҙыу навигацияһына ла өлгөлө әҙерләндек. Яр буйҙарына ағас ташыу эшен ойошҡанлыҡ менән башҡарҙыҡ.

Хәҙер беҙҙең коллективтең тормошонда иң яуаплы ваҡыт — һал ағыҙыу осоро бара. Бөтәһе 117 мең кубометр күләмендә ағас ағыҙылырға тейеш. Уның 70 мең кубометрын беҙ коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренә оҙатасаҡбыҙ. Күп кенә һалдар оҙатылды ла инде.

Яҙҙың иртә килеүен иғтибарға алып, беҙҙең коллектив ҡыуғын ҡыуыу планын срогынан ике көн алда, ә ағасты һаллап ағыҙыу планын 20 августа тамамларға йөкләмә алды.

Хәҙер эштә күрше райондарҙан килгән 400 колхозсы һәм 330 даими эшсе ҡатнаша. Сезонлы эшселәр ҙә, леспромхоздың даими работниктәре лә, бөйөк төҙөлештәр өсөн ағастың әһәмиәтен аңлап, фиҙакәр хеҙмәт күрһәтәләр. Коммунист Шакир Батталов етәкселек иткән сезонлы эшселәр бригадаһы айырыуса ҙур хеҙмәт етештереүсәнлеге күрһәтә. Бригада члендарынан Нәғим Ғаянов, Ғәли Кәшифуллин, Ханна Кәримова иптәштәр көндәлек эш заданиеһын систематик арттырып үтәйҙәр. Юг йылғаһында мастер Фамутдинов, бригадир Бухин етәкселек иткән даими эшселәр ҡыуғын ҡыуыуҙы график буйынса билдәләнгән сроктан ике көн алда тамамланылар.

Хәҙер беҙҙең алда торған иң яуаплы бурыстарҙың береһе — коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренә әҙерләнгән ағастарҙың сифатын төшөрмәйенсә, уңышлы илтеп еткереү. Беҙ был бурысты намыҫлы үтәрбеҙ.

В. Кирьянов,
Танып леспромхозы директоры.

Алдынғы тәжрибәләр трибунаһы

„Төйәләҫ" колхозында йылҡысылыҡ эше өлгөлө ойошторолған

Йылҡы малдарын был буйынса көтөүлектә йөрөтөү — тибендә аҫрау ул. Йылҡыны, кәртәлә тотоуға ҡарағанда, тибендә аҫрауҙың байтаҡ ҡына өҫтөнлөктәре бар. Сөнки бында уларҙы тәрбиәләү, ҡарау, ашатыу өсөн хеҙмәт күп һалынмай. Шуның арҡаһында үҫтерелгән аттарҙың үҙенә төшкән хаҡы ҙур булмай. Тибендә йөрөп үҫкән аттар таҙа, сыҙамлы, эшкә ныҡ булыу яғынан бик ныҡ айырылалар. Йылҡы малдарын тибендә йөрөтөүҙә дөрөҫ ойошторған шарттарҙа, улар үрсеүгә һәләтле булалар, бейәләр ҡыҫыр ҡалмайҙар һәм ҡолондар яҡшы һаҡланалар.

Быының өсөн алдан яҡшы шарттар тыуҙырырға кәрәк. Көтөүлектәргә аҙыҡ әҙерләнә, страховой фонд иҫәбендә бесән ҡалдырыла, көҙгө-ҡышҡы эсе елдәрҙән, буранлардан ышыҡланыу өсөн һарайҙар һалына, малдар даими күҙәтеп торола. Тибен эше яҡшы ойошторолған колхоздарҙа йылҡылар көр, үрсемгә һәләтле булып үҫәләр.

Баймаҡ районы «Төйәләҫ» колхозының был эштә бай тәжрибәләре бар. Был колхоз һуңғы 5 йыл эсендә йылҡы үҫтереүҙә ҙур уңыштарға өлгәште. Мәҫәлән, 1945 йылда уның 175 баш [illegible] бар ине, 1950 йылда ул 355 башка етте. 1951 йылда был һан тағы ла байтаҡҡа артты.

Йылҡысылыҡ фермаһына коммунист иптәш Х. Алибаев етәкселек итә. Шакир Рәсулов һәм Әнүәр Рәсулов иптәштәр 12—14 йыл инде йылҡы көтәләр.

Колхоздың көтөүлектәре Ирәндек тауының итәгендә урынлашҡан. Йылҡыларҙы тибендә йөрөтөү техникаһы түбәндәгесә: бөтә көтөүлек һәм сабынлыҡ ерҙәре ете участкаға бүленгән. Уларҙы планлы рәүештә дөрөҫ файҙаланыу тибен малдарын үҫтереүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Сөнки аттарҙы көтөүлектә йөрөтөү шарттары көтөүлектәге үләндәрҙең аҙыҡлылыҡ сифаты, йыл әйләнәһенең ваҡытына ҡарап, төрлөсә була. Шуның өсөн дә көтөүлек хужалығын йылдың төрлө ваҡытында үләндәрҙең билдәле үҫештәренә ҡарап ойошторорға кәрәк.

Яҙғы көтөү, ҡағиҙә буйынса, ҡылған үләнле ерҙәрҙә йөрөтөлә. Сөнки яҙ көндәре, ҡар иреп бөткәс тә, был үҫемлек бик тиҙ үҫеп ҡалҡына һәм иҫке төрлө үләндәр менән бергә, малдарҙы көрәйтә торған, бик яҡшы аҙыҡ була. Эҫе көндәр килеп еткәс тә, ҡылған үләне үҫешен аҡрынайта. Был ваҡытта икенсе төрлө үләндәр етешә, сәскә ата. Йылҡы көтөүсеһе быларға иғтибар итергә тейеш. «Төйәләҫ» колхозында тап шулай эшләнә лә. Иптәш Алибаев йылҡыларҙы көтөүлектә көн төүлегенә йөрөтә. Ятып ял итеү өсөн 3—4 сәғәт ваҡыт бирә.

Йәй көнө яландағы көтөүлектәрҙә үләндәр киба башлау менән, йылҡылар урман-ялан участкаларына, йылға буйҙарына күсереләләр. Бындай урындарҙа һутлы үләндәр күп була. Йәйге эҫе көндәрҙә, күгәүендәр һәм бөгәләктәр осҡан осорҙа, малдар елеҫ ерҙәрҙә көтөләләр. Шакир һәм Әнүәр Рәсуловтар йылҡыларҙы тап шулай йөрөтәләр.

Көҙ көндәре — көтөүҙә йөрөгән йылҡылар өсөн иң яҡшы осор ул. Был осорҙа күгәүендәр һәм себендәр булмайҙар. Еүешлектең артыуы һәм көндәрҙең һалҡынайа төшөүе менән ялап үҫемлектәре тереләләр. Ер туңа башлаһас та, көтөүлектә әрем кеүек иң аҙыҡлы ҡара үләндәр өлгөрә. Уларҙы йылҡылар яратып ашайҙар. Ҡара әрем (майҡара үлән) дарҙы бик һимертә. Был үләндәр [illegible] осорҙа ашарға яраҡһыҙ була, ә [illegible] осорҙа яҡшы аҙыҡ булып әйләнә, [illegible] ваҡытта шулай уҡ [illegible] үләндәре лә тәмле һәм туклы булалар.

Көҙ көндәре йылҡы көтөүен т[illegible] ҙарҙа йөрөтөү уларҙы һимертеүгә [illegible] ҙәм итә. Был эште яҡшы итеп ой[illegible] роу — йылҡысыларҙың намыҫлы бу[illegible] ул.

Яҡшы ҡурпыла йөрөп туй[illegible] һуң, аттар татырлыҡлы ерҙә аҙ[illegible] лайҙар. «Төйәләҫ» колхозының йы[illegible] сылары быны бик яҡшы беләләр. Йылҡыларҙы һәр аҙна һайын таты[illegible] тарға ҡыуып торалар. Унда йыл[illegible] татырлыҡта үҫкән тоҙло үләндәр[illegible] ҙар һәм тоҙло тупраҡ та ялайҙар [illegible] ике көндән һуң көтөү кире ҡурпы[illegible] гә килтерелә. Шулай итеп, ҡышҡа йылҡы малдары ла яҡшы көрләнә[illegible] ләр.

— Күп йыллыҡ тәжрибә шуны күрс[illegible] тә, — ти иптәш Шакир Рәсулов, — [illegible] көндәрҙә йылҡы малдарын яҡшы [illegible] һимертеп алғанда ғына, ҡыш [illegible] бендә яҡшы ойоштороп була.

Йылҡыны ҡышҡы тибендә йөрөтө[illegible] иң яуаплы осор булып тора. Тибен[illegible] ҡылары аяҡтары менән ҡарҙы [illegible] һәм шул ерҙәге үләнде ашарға тей[illegible] Бында йылҡы көтөүсеһенә бик ҙур [illegible] яуаплы эш тапшырылған. Ул тиб[illegible] дөрөҫ ойошторорға һәм тибенлек [illegible] ғындағы үләндәрҙе экономиялы аш[illegible] ға тейеш.

«Төйәләҫ» колхозының йылҡы[illegible] көҙҙән яҡшы һимереп алалар ҙа, [illegible] да, аҙын да көр булалар. Шуның [illegible] был колхоздың бейәләре эре, яҡшы [illegible] лондар бирәләр.

Был колхозда бөтә аттар ҙа [illegible] тибенгә ебәреләләр. Кәртәлә, базала [illegible] өсөн ҡарт аттар һәм ҡолондар ғына [illegible] дырыла. Уларға бесән һәм концентр[illegible] аҙыҡтар бирелә. Өҫтәмә аҙыҡ шулай [illegible] тибен малдарына ла бирелә.

«Төйәләҫ» колхозы йыл һайын һәр [illegible] атҡа 15—20 центнер иҫәбенән [illegible] әҙерлай. Шул иҫәп менән тибенлек [illegible] дә лә страховой фонд әҙерлана.

Йылҡысылыҡ колхозға бик ҙур [illegible] килтерә. Бында бик яҡшы ҡымыҙ [illegible] ләнә. Колхозсыларҙан артҡан ҡымыҙ [illegible] хоз баҙарында һатыла һәм унан [illegible] доход йылына 16 мең һум тәшкил [illegible]

1950 йылда «Төйәләҫ» колхозы [illegible] ҡысылыҡ буйынса ойошторолған [illegible] күргәҙмәһендә беренсе урынды алы[illegible] уға, КТФ мөдире Алибаевты, [illegible] бунщик Әнүәр Рәсулов һәм башҡа [illegible] ғы работниктарҙы бүләкләү өсөн, [illegible] та беренсе премия бирелде.

Башҡорт АССР-ының алдынғы йылҡы[illegible] сылары 1951 йылда буласаҡ Бөтә Со[illegible] ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡат[illegible] шыуға хоҡуҡ алыу өсөн үҙ-ара ярыш[illegible] лар. «Төйәләҫ» колхозының йылҡысы[illegible] фермаһы Бөтә Союз ауыл хужалығы к[illegible] гәҙмәһендә үҙенең уңыштарын киң к[illegible] һәтеү өсөн кандидат булып тора.

И. Сайған,
ауыл хужалығы фәндәре кандид[illegible] Башҡорт АССР-ы малсылыҡ тәжриб[illegible] станцияһының өлкән ғилми хеҙм[illegible] ниге.

Общественный малсылыҡты үҫтереү — үҙәк бурыс

Ошо йылдың 17 майында ВКП(б) Өлкә Комитетында ВКП(б) райкомдары секретарҙарынан, район Советы исполкомдары председателдәренән һәм МТС директорҙарынан кустовой кәңәшмәһе булып үтте. Унда шулай уҡ район ауыл хужалығы бүлеге мөдирҙәре һәм малсылыҡ специалистәре ҡатнашлыҡ итте.

Кәңәшмәлә общественный малсылыҡты үҫтереү планының үтәлеше һәм малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу мәсьәләләре ҡаралды. Был турала ВКП(б) райкомдары секретарҙарының, район Советы исполкомдарының, МТС директорҙарының, район ауыл хужалығы бүлеге мөдирҙәренең информациялары тыңланды.

ВКП(б) Өлкә Комитеты секретаре иптәш **Ваһапов** кәңәшмәне асып, беренсе һүҙҙе ВКП(б)-ның Кушнаренко райкомы секретаре иптәш **Бердинга** бирҙе.

Иптәш Бердин райондың малсылыҡ өлкәһендә хурлыҡлы артта ҡалыуының сәбәптәрен асып бирәһе урында, объектив сәбәптәргә һылтанды. Был район малсылыҡ үҫтереүҙең бер генә төрө буйынса ла государство планын үтәй алғаны юҡ. Быының төп сәбәбе район партия, совет ойошмаларының, колхоз һәм МТС етәкселәренең был төп мәсьәләләргә һаман да икенсе нәүбәттәге эш итеп ҡарауҙарында, малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырмауҙарында. Был район быйыл да мал аҙығы культуралары сәсеүҙә әҙҙә. Күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡ үләндәр сәсеү планы артылап ҡына үтәлгән. Болонлоҡтарҙы, көтөүлектәрҙе яҡшыртыу, уларҙың урожайын күтәреү буйынса ла бер ниндәй ҙә эш алып барылмай.

ВКП(б)-ның Өфө райкомы секретаре иптәш **Драпено** был өлкәләге ҡайһы бер уңыштарҙы әйтеү менән бергә, малсылыҡ торлаҡтары төҙөү эшендәге ҙур етешһеҙлектәргә туҡталды. Районда төҙөлөш материалдары менән эш бик насар тора. 3610 кубометр ағас ҡырҡылһа ла, уны ташыу аҡрын бара. Колхоздар кирбес етештереү менән шөғөлләнмәйҙәр.

Унан һуң малсылыҡ үҫтереү планын үтәүҙә әҙәүсе, республикала иң түбән продукт алыусы Благовещен районы етәкселәренең информацияһы тыңланды. Район ауыл хужалығы бүлегенең баш зоотехнигы иптәш **Крикунов** бик тыныс ҡына «уңыштар» тураһында һөйләй башланы.

— Ни өсөн государство планын үтәүҙә әҙәһегеҙ, ни өсөн малдарҙан бик түбән продукт алаһығыҙ?—тигән һорауға инсек тип яуап бирергә лә белмәйенсә, аптырап кире урынына ултырҙы.

Благовещен район Советы исполкомы председателе иптәш **Житяев** тә бына был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, малдарға ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн район партия, совет ойошмаларының конкрет ниндәй саралар күреүен әйтә алманы.

— Һуңғы йылдарҙа мал аҙығы базаһын нығытыу буйынса күп кенә саралар үткәрҙек, — ти Бүҙәк район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш **Мәрсәлимова**. Колхоздарҙа мал аҙығы культураларын сәсеүгә серьез иғтибар бирелә. Быйыл район үлән һәм силос культураларын сәсеү планын арттырып үтәне. Болонлоҡтарҙы, көтөүлектәрҙе яҡшыртыу буйынса ла ныҡлы эш алып барыла.

СССР Әҙерләүҙәр министерствоһының Башҡорт АССР-ы буйынса вәкиле иптәш **Волков** үҙенең сығышында республикала государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыу планының ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәлеүенә, малдарҙың продукт биреүсәнлегенең түбән булыуына туҡталды һәм айырым райондарҙы ныҡлы тәнҡитләне.

Кәңәшмәлә шулай уҡ ВКП(б)-ның Ҡырмыҫҡалы райкомы секретаре **Шәйәхмәтов**, Иглин район Советы исполкомы председателе **Алексеев**, Оло Тәләк район Советы исполкомы председателе **Олушнев**, Нуриман МТС-ы директоры **Галин** һәм башҡа иптәштәр сығыш яһанылар.

Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министры иптәш **Нәбиуллин** үҙенең сығышында республиканың малсылыҡ өлкәһендә бик артта ҡалыуын әйтте. Благовещен, Кушнаренко, Нуриман, Ҡырмыҫҡалы, Бөҙәәк райондары государств[illegible] планын бик насар үтәйҙәр. Мәҫәлән, Благовещен районы сусҡасылыҡ үҫ[illegible] реүҙең государство планын ни бары 51 [illegible] ҡошсолоҡ планын 16 процентка [illegible] үтәгән. Быының төп сәбәбе урындағы па[illegible] тия, совет ойошмаларының был мәсьә[illegible] не һаман да баһалап еткермәүҙәрен[illegible]

Күп кенә райондар быйыл да м[illegible] аҙығы культуралары сәсеү планын ү[illegible] мәнеләр. Сәсеү эштәрен бигерәк тә Благовещен, Иглин, Покровка, Кушнар[illegible] райондары оҙаҡҡа һуҙҙылар.

Колхоздарҙа малсылыҡ фермалары т[illegible] ҙөү эштәре бик аҡрын бара. Ағас әҙ[illegible] ләү 33, ә ташыу планы ни бары [illegible] процентка ғына үтәлгән.

1951 йыл, — ти иптәш Ваһапов [illegible] ес йыллыҡ планды үтәүҙең һуңғы, [illegible] иткес йылы. Партия, совет һәм а[illegible] хужалығы органдарының бурысы — [illegible] бер колхоздың, совхоздың малсылыҡ[illegible] үҫтереү һәм государствоға малсылыҡ[illegible] продукттары тапшырыу планын үт[illegible] һәм арттырып үтәүен тәьмин итер[illegible] тора. Был эштең уңышы һәр бер [illegible] малға ныҡлы аҙыҡ базаһы булдыр[illegible] ға бәйләнгән. Быйыл һәр бер рай[illegible] дың мал аҙығы культуралары с[illegible] планын үтәп, унан юғары урожай ал[illegible] ҙарына өлгәшергә кәрәк.

Һәр бер колхозда мал аҙығы әҙер[illegible] һәм төҙөлөш эштәре буйынса махсус[illegible] бригадалар төҙөп, уларҙың ныҡлы [illegible] менән эшләүенә өлгәшеү — малсы[illegible] өлкәһендәге эштең уңышын хәл ит[illegible]

Кәңәшмәнең аҙағында ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты секретаре иптәш **Ваһапов** сығыш яһап, общественный малсылыҡты үҫтереүҙә партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының алдында торған конкрет бурыстарҙы [illegible] талды.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Тракторҙар паркын насар файҙаланалар"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 93-сө номерында Поҙдуб МТС-ы етәкселәренең машиналар паркын файҙаланыуҙа яуапһыҙ ҡарауҙары һәм баҫыу эштәрен башҡарыу буйынса колхоздар менән төҙөлгән договорҙы үтәү өсөн көрәш ойошторманыуҙары тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Бөҙәәк район комитеты редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Тракторҙар паркын насар файҙаланалар» тигән темала «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған хәбәр ВКП(б) район комитетының 15 майҙа булған ултырышында ҡуйылып тикшерелде. Бюро Поҙдуб МТС-ының эшенә ҡарата булған тәнҡитте бик урынлы тип тапты һәм трактор паркы менән насар етәкселек иткәнлеге өсөн МТС директоры Ореховҡа ныҡлы иҫкәртеү яһаны һәм шул уҡ ваҡытта уны алдағы көндә тракторҙарҙың эшләмәй ултырыуҙарына юл ҡуймау өсөн бөтә сараларҙы күрергә һәм колхоздар менән төҙөшкән договорҙы билдәләнгән срокта үтәлеүен тәьмин итергә мәжбүр итте».

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Судьяларҙың халыҡ алдында отчеты

Беҙҙең илебеҙҙә халыҡ судьялары халыҡтың үҙе тарафынан һайланып ҡуйылалар. Халыҡ судьяһының отчеты халыҡ судының эшен һайлаусылар тарафынан контролдә итеүҙе, һайлаусылар менән яҡынылыҡ бәйләнеш урынлаштырыуҙы тәьмин итә. Шуның менән бергә, ул совет граждандарын коммунизм рухында, Тыуған илгә бирелгәнлек, совет закондарын хөрмәтләү һәм нык һаҡлау рухында тәрбиәләү средстволарының береһе булып тора.

Халыҡ судьяһы алдына ҡуйылған, югарыла күрһәтелгән талаптарҙы үтәп, мин үҙ эшемдә һайлаусылар менән тығыҙ бәйләнеш тотам. 1950 йылда халыҡ судының эше тураһында предприятиеларҙа, һайлау участкаларында һәм башҡа общественный урындарҙа һайлаусылар алдында 9 тапҡыр отчет доклады менән сығыш яһаным. Сығыштарымда мин социалистик милкте һаҡлауҙа, предприятиеларҙа һәм учреждениеларҙа хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуҙа, граждандарҙың шәхси милкен һәм торлаҡ хоҡуҡтарын яҡлауҙа халыҡ судының эшен ентекле рәүештә яҡтыртам. Судта ҡарала торған эштәрҙе тикшергән ваҡытта ҡайһы бер предприятиеларҙа һәм учреждениеларҙа булған күп кенә етешһеҙлектәрҙең асылыуы һәм был етешһеҙлектәрҙе тыуҙырыусы сәбәптәр, шулай уҡ ул етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү юлдары тураһында күп кенә миҫалдар килтерҙем. Бындай етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн халыҡ суды тарафынан ниндәй саралар күрелгәнлеге һәм күреләсәге тураһында һайлаусыларға аңлаттым.

Отчет докладын үткәреү өсөн мин предприятиеларҙың партия һәм профсоюз ойошмалары менән берлектә йыйылыштарҙы алдан әҙерләйем. Предприятиеға килгән менән килеһемде һайлаусылар белеп, әҙерләнеп көтәләр. Шуның өсөн улар докладтан һуң ҙур активлыҡ менән сығыш яһайҙар һәм бик күп һорауҙар бирәләр.

Һайлаусылар араһында совет закондарын аңлатыу буйынса беседалар уҙғарыу эшенә ҙур иғтибар бирәм. 1950 йыл эсендә төрлө темаларға бөтәһе 14 беседа уҙғарҙым. «Сталинсе Конституция», «Социалистик милкте һаҡлау», «Предприятиеларҙа һәм учреждениеларҙа хеҙмәт дисциплинаһы», «Совет государствоһында никах һәм семья», «Торлаҡтар тураһында закондар» тигән темаларға беседаларҙы һайлаусылар бик яратып тыңланылар.

Был докладтар һәм беседалар бөтәһе лә халыҡ судында хөкөм итеү практикаһына бәйләп алып барылдылар.

Һайлаусылар менән йәнле бәйләнеш тотоу халыҡҡа үҙенең аңлашылмаған мәсьәләләрен суд аша һәм үҙе тарафынан һайланып ҡуйылған судья аша хәл итеү мөмкинлеген бирә. Улар урындарҙа совет закондарын боҙоу ваҡиғалары тураһында жалобалар индереп, енәйәтсел эштәрҙе фашлауҙа ярҙам итәләр.

Хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын тикшереп, уларҙы хәл иткәндә волокита һәм бюрократизм менән көрәш һәр ваҡытта ҙур политик әһәмиәткә эйә булып торҙо һәм тора. Ул — хеҙмәтсәндәрҙең талаптарын һәм ихтыяждарын үтәүҙә Совет государствоһы аппаратындағы эштәрҙе яҡшыртыу өсөн иң кәрәкле шарттарҙың береһе.

Партиябыҙҙың һәм государствобыҙҙың бөйөк юлбашсылары Ленин һәм Сталин хеҙмәтсәндәр хаттарына һәм жалобаларына һәр ваҡытта айырыуса хәстәрлекле мөнәсәбәт итергә өйрәтәләр.

Килгән жалобаларҙы тикшереп хәл итеүҙә һәр төрлө волокита булдырмау өсөн халыҡ судында жалобаларҙың ныҡлы иҫәбе һәм уларҙы тиҙерәк хәл итеп, жалоба биреүсегә ваҡытында яуап биреү өҫтөнән контроллек алып барыла.

1950 йылда беҙҙең участка халыҡ судына хеҙмәтсәндәрҙән байтаҡ ҡына жалобалар килде. Улар бөтәһе лә ос көн срок эсендә тикшерелеп, күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса шунда уҡ тейешле саралар күрелде һәм жалоба биреүселәргә яуап ҡайтарылды.

Һайлаусылар араһында халыҡ судының эше тураһында әленән-әле отчет яһап тороу һәм совет закондарын киң пропагандалау һөҙөмтәһендә беҙҙең район буйынса 1950 йылда енәйәт эшләүселек ваҡиғалары, 1949 йылға ҡарағанда, бик ныҡ кәмене.

Был һөҙөмтәләр һайлаусылар араһында өҙлөкһөҙ аңлатыу эштәре алып барыу халыҡ судьяларының мөһим бурысы икәнлеге тураһында һөйләйҙәр.

Ә. Шәмсетдинов,
Черниковск ҡалаһының 4-се участка халыҡ судьяһы.

Кадрҙарҙың экономик белемдәрен күтәреү

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Черниковск ҡала Советы урындағы промышленность работниктәренең экономик белемдәрен күтәреү маҡсатында бер йыллыҡ семинар ойошторғайны. Семинарға бөтәһе 30 кеше [illegible]. Улар араһында совет работниктәре лә күп. Семинар эшендә ҡала план комиссияһы председателе иптәш Раголев етәкселек итә.

Занятиелар ун көнгә бер тапҡыр үткәрелә бара. 12 ғинуарҙан башлап барлығы 14 занятие үткәрелде.

Лекцияларҙы уҡыу эшенә ҡаланың иң күренекле лекторҙары, етәксе партия һәм совет работниктәре йәлеп ителгән. Семинарҙарҙа ҡатнашыусылар күп кенә мөһим темаларға юғары квалификациялы лекциялар тыңланылар. Мәҫәлән, ҡала партия комитетының лекторы иптәш Павлюченко «Социалистик хужалыҡ системаһының төп һыҙаттары һәм капиталистик хужалыҡ системаһына ҡарағанда уның өҫтөнлектәре», иптәш Раголев — «Социалистик промышленность һәм СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙә уның етәкселек роле», «СССР-ҙың милли доходы һәм уның бүленеше» [illegible] лекциялар уҡынылар. [illegible] Раголев тарафынан уҡылған лекцияны семинар члендәре айырыуса ҡыҙыҡһыныу менән тыңланылар. Бында лектор милли доходтың ниндәй тармаҡтарға таралыуын асыҡ күрһәткән картаны оҫта итеп ҡуллана алды.

М. Мостафин.

Һүрәттә: Өфө ҡалаһының [illegible] исемендәге балалар йортонда [illegible] тәрбиәсеһе ҡысҡырып китап уҡыуын тыңлайҙар.

М. Әхмәтйәнов фотоһы.

ШӘРИФ БИККОЛ

ЯЛ ЙОРТО

Гүйә
Тәбиғәттең бөтә күркен
Үҙенә йыйған ошо бер урын.
Бында һауа — дауа,
Лутыш иркен.
Баҡса йәшел уның һәр ҡырын.
Был — ял йорто.
Ап-аҡ [illegible]
Аҡ корпустар тора теҙелеп.
Ана йылға —
[illegible]
Бөрө [illegible] күмелеп.
Был — ял йорто.
[illegible]
Кем генә юҡ бында килгәнен:
Профессор, токарь менән бергә
Ял итәләр бер үк бүлмәлә.
Бында — депутат бар, [illegible]
Пенсионер ҡарт килгән бер айға
[illegible]
[illegible]
Береһе уның уҡый Ленин томын,
Береһе — заводынан хат алған.
(Былтыр [illegible]
[illegible])
Һәр [illegible]
[illegible]
Һәр [illegible]
[illegible]
[illegible]
Ләкин бөтә уйлар,
Бөтә хистәр
Бер маҡсатҡа килеп тоташа:
— [illegible] бөйөк Ватан,
Тантана итһен һәр саҡ тыныслыҡ!
Һәр кем [illegible]
Бында [illegible]
[illegible]
Ял йортонда
(Тағы үҫһен өсөн
Коммунизм төҙөүсе Россия) —
Хеҙмәт фронтының һалдаттары
Яңы позициялар өсөн көс йыя!
Уҙар [illegible]:
Ошо ял йортолай
Тыуған илдең гүзәл икәнен:
Ял йорто ла
Нурлы Ватандың бит
Айырғыһыҙ кескәй киҫәге!

Совет фәне кешеләре

2. ҘУР ТАРИХИ ЭТАП

Яҙғы баҫыу эштәре бара.

Һәр бер колхозда — тракторҙар, ҡатмарлы машиналар... Башҡортостан игенселәренең [illegible] эшкә башлауын моторҙар тауышынан башҡа күҙ алдына ла килтерә алмайһың хәҙер. [illegible]

[illegible]

Большевиктәр партияһы МТС-тарҙа эште юлға һалырға, колхоздарға ярҙам итергә үҙенең иң яҡшы улдарынан — меңдәрсә политработниктәрҙе ауылға ебәрҙе — һәр бер МТС-та политбүлек төҙөлдө.

1933 — 34 йылдарҙа МТС-тарҙың политбүлектәре колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ һәм политик яҡтан нығытыуҙа бик ҙур тарихи роль уйнанылар. Был йылдар — колхоз төҙөлөшөнөң иң яуаплы бер осоро булды.

СССР фәндәр Академияһының тарих институты аспиранты Барый Ғибәдуллин бына ошо тарихи осорға фәнни анализ яһау өҫтөндә йылдар буйы тырышып эшләне. Мәскәүҙең иң яҡшы библиотекаларында, архивтәрендә һәм музейҙәрендә кәрәкле материалдар менән танышты. Илебеҙҙең иң яҡшы ғалимдәре Башҡортостандан килгән йәш коммунисҡа ярҙам күрһәттеләр, уны фән өлкәһендә эшләргә өйрәттеләр.

Ҡатмарлы һәм почетлы фәнни хеҙмәтен Барый Ғибәдуллин бына ошо йылдың башында тамамланы һәм «Башҡортостан колхоздарын ойоштороу-хужалыҡ һәм политик яҡтан нығытыуҙа МТС политбүлектәренең роле» тигән темаға тарих институтында диссертация яҡланы.

Крәҫтиәндәрҙең киң активен партия тирәһенә туплау тураһында иптәш Сталиндең күрһәтмәһен үтәп, МТС политбүлектәре партияһыҙҙар активенең ҙур армияһын барлыҡҡа килтерҙеләр. Һәр политбүлектең 300—400 кешенән даими активе булдырылды.

«Ҡатын-ҡыҙҙар — ауылда ҙур көс» — тип әйәрте иптәш Сталин. МТС политбүлектәре башҡорт, татар һәм башҡа милләттәрҙең ҡатын-ҡыҙҙары араһында систематик эшләүҙе үҙҙәренең мөһим бурыстары итеп иҫәпләнеләр. [illegible] колхоз производствоһында [illegible]

тырҙылар. 1934 йылда яҙғы баҫыу эштәрендә, 18 МТС хеҙмәтләндергән зонаһы алынған мәғлүмәттәр буйынса ғына ла, 8 меңдән артыҡ колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнашты. Ул йылда 25 МТС зонаһындағы колхоздарҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙан 5889 активистка, 5710 ударница иҫәпләнә ине. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан механизаторҙар кадрҙары әҙерләү, уларҙы етәксе эшкә үрләтеү шул йылдан башлап киң ҡолас алды.

Колхоздарҙың партия ойошмалары менән берлектә МТС политбүлектәре һәр төрлө дошман элементтәрҙе юҡ итеүҙә, намыҫлы крәҫтиәндәрҙе яуаплы посттарға үрләтеүҙә ҙур эш башҡарҙылар. Хеҙмәтте ойоштороу, иҫәп-хисап, планлаштырыу эштәре юлға һалынды. Колхоздарҙа производство бригадалары нығытылды: эштә һыналған бригадирҙар һайлап алынды, ер участкалары, тартыу көстәре һәм инвентарҙар даими файҙаланыуға беркетелде.

Хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуҙа һәм эшләп сығарыуҙы күтәреүҙә социалистик ярыш һәм ударниктар хәрәкәте ҙур һөҙөмтәләр бирҙе. Колхоздар, бригадалар һәм айырым колхозсылар араһында социалистик ярыш йөкләмәләре алыу, уларҙы систематик тикшереп барыу, колхоздың һәм бригаданың ҡыҙыл таҡтаһын, күсмә Ҡыҙыл Байрағын, ударник кнәгәһе булдырыу, колхозсы-ударниктарҙың слеттарын уҙғарыу, — барлыҡ был саралар башланған хәрәкәтте массовый төҫкә әйерелләрҙе. Социалистик ярышты дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә бары тик 30 МТС зонаһындағы колхоздарҙа ғына ла 1933 йылдың йәйендә ударниктар һаны 4.934 кешенән 16.316 кешегә етте. Был массовый хәрәкәттә коммунистар һәм комсомолецтар хеҙмәт батырлығының гүзәл өлгеләрен күрһәттеләр.

Политбүлектәр үҙҙәренең эшләү осоронда колхоздарҙа барлыҡ хужалыҡ кампанияларының үҙ ваҡытында башҡарылыуына, государство алдындағы заданиеларҙың срогынан алда үтәлеүенә өлгәштеләр. Баҫыуҙарҙы алдынғы совет агробиология фәне [illegible] эшкәртеү, агротехника сараларын дөрөҫ ҡулланыу, сәсеү һәм урожай йыйнау срокын ҡыҫҡартыу колхоздарҙа урожайлылыҡты байтаҡ күтәрергә мөмкинлек бирҙе.

МТС-тарҙың политбүлектәре колхоз королошон нығытыу өҫтөндә эшләп, киң ҡатлам колхозсыларҙың мөхәббәтен һәм хөрмәтен ҡаҙандылар. Политбүлектәрҙең ҙур һәм почетлы эштәрен колхозсы крәҫтиәндәр бер ваҡытта ла онотмаҫтар, уларҙың хеҙмәте коллективлаштырыу хәрәкәтенең тарихында маҡтаулы урынды алып торор.

1934 йылдың көҙөндә ВКП(б) Үҙәк Комитетының ноябрь пленумы илебеҙҙә орлоҡсолоҡ мәсьәләһен хәл итте, тип билдәләне, икмәк һәм башҡа ҡайһы бер продукттарға карточка системаһын бөтөрөргә ҡарар итте. Шул уҡ пленумдың ҡарарҙарында: «...Политбүлектәр төҙөү үҙен тулыһынса аҡланы» тип яҙылды һәм уларҙы партияның район комитеттәре менән бергә ҡушыу мәсьәләһе хәл ителде.

Үҙҙәренең ике йыл эшләү осоронда политбүлектәр ғәйәт ҙур эш башҡарҙылар. Уларҙың эш тәжрибәһен фәнни нигеҙҙә йомғаҡлау һәм өйрәнеүҙә тарих фәндәре кандидаты Барый Ғибәдуллиндең фәнни хеҙмәте ҡиммәтле материал булып тора.

Ғ. Әхмәтшин.

КОЛХОЗДА ЯҢЫ ТӨҘӨЛӨШТӘР

Эреләтелгән «Правда» колхозында (Шишмә районы) төҙөлөш эштәре киң йәйелдерелде.

Бында иптәш Рәжәп Исәнғолов етәкселегендә махсус төҙөлөш бригадаһы эшләй. Бригада члендәренән тимерсе Ә. Тимерьянов, плотниктәрҙән Ә. Иомағолов, Н. Суфиянов, Исәнғолов һәм башҡа иптәштәр эштә һәр ваҡытта өлгө күрһәтәләр.

Ватылып, бер нисә йылдар буйы эшләмәй ултырған тирмән хәрәкәткә килтерелде. Ул двигатель ярҙамында эшләй. Был тирмән артель һәм колхозсылар өсөн һәр көндә уртаса 25—30 центнер иген тарта.

Бынан башҡа артелдең общественный малдары өсөн стандарт торлаҡтар, ҡошсолоҡ фермалары өсөн биналар һәм ҙур клуб төҙөү эше планлаштырылды.

Б. Ғәбдрахман.

УҢЫШЛЫ ЭШ

Черниковск ҡалаһының ярым фабрикаттар заводы коллективы ҙур политик һәм хеҙмәт күтәрелеше шарттарында эшләй.

Ул апрель айында социалистик ярышты киң йәйелдереп, айлыҡ планды продукцияның бөтә төрҙәре буйынса ла арттырып үтәне. Начальнигы коммунист иптәш Абдюков булған цехта үткән айҙа план үтәлеше 187 процент тәшкил итте.

Уңыштар менән рухланған коллектив май айында ла хеҙмәттең яңы еңеүҙәре өсөн көрәшә. Стахановсыларҙан коммунист Байморатов, Парахина, Кононов, Котков, Ғиләжетдинова һәм башҡа иптәштәр смена һайын 150 — 180 процент норма үтәлеше биреп эшләйҙәр.

У. Әһлиуллин,
Черниковск ҡалаһының ярым фабрикаттар заводының партбюро секретаре.

ӘҘӘБИ ТҮҢӘРӘК ОЙОШТОРОЛДО

Ошо көндәрҙә ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитете органы «Ленинсе» һәм «Ленинец» газетаһының редакцияһында республикабыҙҙың башлап яҙыусыларының әҙәби түңәрәге ойошторолдо.

Был түңәрәк рус һәм башҡорт башлап яҙыусыларынан ике төркөмгә бүленеп, рус түңәрәгенә иптәш Миняев, башҡорт түңәрәгенә яҙыусы Ҡадир Даян һәм Яҡуп Ҡолмой иптәштәр етәкселек итә.

Күптән түгел был түңәрәктәрҙең тәүге занятиелары булып үтте. Унда ойоштороу мәсьәләләре ҡаралды һәм ҡайһы бер башлап яҙыусыларҙың хикәйәләре һәм шиғырҙары тикшерелде.

А. Харисов.

МӘКТӘПТӘРҘӘ ЭКЗАМЕНДӘРҘЕ ОЙОШҠАНЛЫҠ МЕНӘН ҮТКӘРӘЙЕК!

Башланғыс, ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәрҙә экзамендар уҡыусылар һәм уҡытыусылар тарафынан ғына түгел, бәлки ата-әсәләр, бөтә совет общественносе тарафынан ҙур иғтибар менән ҡарала.

Беҙҙең илебеҙҙә мәктәптәр эшенә һәм уларҙа үткәрелә торған экзамендарға ҡарата ошондай иғтибарлы һәм хәстәрлекле ҡараш дөйөм яҡшы бер традиция булып тора.

Быйыл мәктәптәрҙә экзамендар иртәгә—21 майҙа башлана. Бары тик Башҡорт АССР-ында ғына IV—X кластарҙа уҡыусы 400 меңдән ашыуыраҡ уҡыусы экзамендар тапшырасаҡ. Ошо ғына һан да мәктәп тормошонда был яуаплы осорҙоң ниндәй ҙур принципиаль әһәмиәткә эйә булғанлығын асыҡ күрһәтә.

Ағымдағы уҡыу йылында айырым фәндәр буйынса программаларҙың йөкмәткеһенә ҡайһы бер үҙгәрештәр индерелде. Билдәле булғанынса, иптәш Сталиндең тел ғилеме тураһындағы гениаль хеҙмәттәре мәктәптәр эшен өсөн баһалап бөтөргеһеҙ әһәмиәткә эйә булып торҙолар. Бөйөк юлбашсының күрһәтмәләре нигеҙендә мәктәптәрҙә рус телен һәм әсә телен уҡытыуҙы үҙгәртеп ҡороу буйынса эштәр үткәрелде һәм үткәрелә. Ошо әйтелгәнләй мәктәптәрҙә рус телен һәм әсә телен уҡытыуҙың ҡуйылышы серьез яҡшырғанлығы күренә. Уҡыусылар экзамендарға был фәндәр буйынса ныҡлы ғына белем менән килделәр.

СССР фәндәр Академияһының һәм медицина фәндәре Академияһы менән берлектә үткәрелгән сессияһында И. П. Павловтың уҡыуы өйрәнеү һәм артабан үҫтереү буйынса булып үткән дискуссия уҡытыусыларҙы күп нәмәгә өйрәтте. Дискуссия йомғаҡтары тәбиғәт уҡытыусылары тарафынан мәктәп программаһының күп кенә мәсьәләләре буйынса дәрес үткәргәндә иҫкә алындылар.

Республикабыҙҙың мәктәптәре 1950—1951 уҡыу йылын яҡшы шарттарҙа үткәрҙеләр. Мәктәптәр уҡыу-күргәҙмә пособиелар, художестволы әҙәбиәт, дәреслектәр һәм дәфтәрҙәр менән элекке йылдарға ҡарағанда байтаҡ яҡшы тәьмин ителделәр. Мәктәптәрҙең материаль базаһы нығытылды һәм нығытылыуҙа дауам итә, уҡыу биналарының майҙаны киңәйтелде.

Ағымдағы уҡыу йылында мәктәптәр уҡытыусылар кадрҙары менән яҡшы ғына тәьмин ителделәр. Мәктәптәрҙә үҙған йылдар менән сағыштырғанда методик эш, алдынғы уҡытыусыларҙың эш тәжрибәләрен таратыу һәм популярлаштырыу ҡәнәғәтләнерлек йәйелдерелде. Уҡытыусыларҙың оҫталығы, уларҙың эш квалификацияһы өҙлөкһөҙ үҫеүҙә дауам итә.

Бөтә ошо шарттар экзамендар һөҙөмтәһенә йоғонто яһарға тейештәр. Беҙ ағымдағы уҡыу йылында уҡыусыларҙың экзамендарҙа ныҡлыраҡ белем һәм практик күнекмәләр күрһәтәсәктәрен көтөргә хаҡлыбыҙ.

1951 йылда экзамендар СССР Министрҙар Советы тарафынан раҫланған «Экзамендар тураһындағы положение» һәм башланғыс, ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәрҙә экзамендар үткәреү тураһында РСФСР Мәғариф министерствоһының инструкцияһы нигеҙендә үткәреләсәк. Үҙған йылғы инструкция менән сағыштырғанда үҙгәрештәр ҙур түгел.

Ҡайһы бер фәндәр буйынса билеттарҙағы үҙгәрештәр ағымдағы уҡыу йылы экзамендарының үҙенсәлеге булып тора. Мәҫәлән, рус теле буйынса булған экзамен билеттарында уҡыусыларҙың грамматиканы белеүҙәрен тикшереүгә айырыуса иғтибар бирелә. Һөйләмдәрҙе грамматик тикшереүгә ҡарата талап көсәйтелде.

География буйынса билеттарҙа коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәренә һәм халыҡ демократияһы илдәренә күп иғтибар бирелә.

Химия, тәбиғәт һәм физика буйынса экзамендарҙа практик эштәргә ҡарата талаптар ҙурыраҡ буласаҡ, был практик эштәр — приборҙар менән файҙалана белеү, тәжрибә яһау, схемалар һыҙыу һорауҙарға яуап биргән ваҡытта башҡарылырға тейеш.

Ләкин нигеҙҙә материалдар күләме һәм уҡыусыларға ҡарата булған талап үҙған йылдағы кимәлдә ҡалдырыла.

Үҙған йылдың экзамен йомғаҡтары уҡытыусыларҙың һәм мәктәп етәкселәренең был мөһим һәм яуаплы эште ҡәнәғәтләнерлек башҡарғанлыҡтарын күрһәттеләр. Мәктәптәрҙең ҙур күпселегендә экзамендар тураһында СССР Министрҙар Советы тарафынан раҫланған Положениенең талаптары теүәл үтәлде. Шуның менән бергә айырым мәктәптәрҙә был положениене серьез боҙоу булғанлығы билдәләнелде. Саҡмағош районының Рәжәп урта мәктәбендә экзамен комиссияһының ҡайһы бер члендәренең үҙҙәренең бурыстарына намыҫһыҙ ҡарау факттары билдәләнелде. Экзамен комиссияһы әҙәбиәт буйынса темаларҙың абсолют йәшерен булырға тейешлеген тәьмин итмәнеләр, был айырым уҡыусыларға хаҡлы булмаған билдәләр алыуға мөмкинлек бирҙе. Яҙма эштәрҙе тикшергән ваҡытта хаталар ҡалдырылған. Бөтә эштәргә лә комиссия члендәре ҡул ҡуймағандар.

Был мәктәптә экзамендар шул тиклем насар ойошторолғайны, хатта Мәғариф министерствоһына комиссияны таратырға, ошо мәктәптә уҡыусыларҙан экзамендар алыуҙы Саҡмағош урта мәктәбендәге экзамен комиссияһына тапшырырға тура килде.

Министерство башҡа ҡайһы бер комиссияларҙың эшендә лә (Өфө ҡалаһының 26-сы номерлы мәктәбендә, Бозаяз урта мәктәбендә) серьез хаталарҙы асты.

Үҙған йылда экзамен комиссияларының эшендә ошондай факттарҙың булыуы мәктәптәр һәм халыҡ мәғарифе бүлектәре етәкселәренән экзамендар барышына үҙҙәренең етәкселек итеүҙәрен көсәйтеүҙе талап итә.

Экзамендар тураһындағы Положение һәм инструкция һәр бер мәктәп өсөн боҙоуы мөмкин булмаған етәксе материал булып хеҙмәт итергә тейеш. Айырым мәктәптәрҙә экзамендар үткәреүҙең теге йәки был мәсьәләләрен үҙҙәренсә аңлауҙарына юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Түбәнге кластарҙа һәм кластан-класҡа күсереү экзамендарына иғтибар бирмәү етмәү үҙған йылдарҙың етешһеҙлеге булып тора. Ғәҙәттә район халыҡ мәғарифе бүлектәре һәм мәктәп директорҙары төп иғтибарҙы өлгөргәнлек аттестаты экзамендарына бирәләр, шул уҡ ваҡытта башҡа кластарҙағы экзамендар етәкселәрҙең иғтибарынан төшөп ҡалалар. Практикала был айырым мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың бер кластан икенсе класҡа күсеүен дөрөҫ үткәрмәү күренештәренә килтерҙе. Был хәл быйыл төҙәтелергә тейеш. Үҙған йылдарҙағыса мәктәптәрҙә экзамендарға общественностең һәм ата-әсәләрҙең иғтибары йәлеп ителгән булырға тейеш. Ата-әсәләр уҡыусылар өсөн нормаль режим ойоштороуҙа мәктәптәргә ярҙам итә алалар һәм итергә тейештәр.

Мәктәптәрҙә экзамен көндәрендә тыныс, серьез обстановка булдырылырға тейеш. Экзамендар барышына зарар килтерә торған борсолоуҙарға, бәхәстәргә һис бер юл ҡуйырға ярамай.

Үҙған йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһының беренсе номерлы ашсе-йәштәр мәктәбендә экзамен комиссияһы члендәре араһында фекер айырымлыҡтары барлыҡҡа килде. Комиссия члендәре араһындағы бәхәс уҡыусыларға барып етте. Ә был бөтөнләй ярай торған эш түгел.

Экзамен көндәрендә уҡытыусыларҙан һәм мәктәп етәкселәренән ҙур тотанаҡлылыҡ талап ителә. Ата-әсәләр алдына ла ошондай уҡ талап ҡуйылған.

Ҡайһы бер ата-әсәләрҙең үҙ балаларының уңышлыҡтары тураһында кәрәгенән тыш «ҡайғыртыу» факттары әле лә йәшәй. Улар мәктәпкә теге йәки был уҡыусының өлгәшеүенә билдә ҡуйыуҙа нигеҙһеҙ ғәйепләү ташлауҙан да оялмайҙар. Бындай күренештәр, әлбиттә, һирәк осрай, ләкин улар уҡыусыларға зарарлы йоғонто яһайҙар. Бындай ата-әсәләр мәктәп — балаларҙың дуҫы, уҡытыусылар үҙҙәре тәрбиәләгән балаларға уңышлылыҡтар теләйҙәр һәм әгәр уҡытыусыға уның уҡыусыһына насар билдә ҡуйырға тура килә икән бының иң тәүҙә уҡытыусының үҙенә ауыр икәнлеген аңларға тейештәр. Бындай нигеҙһеҙ дәғүәләр бигерәк тә уңышһыҙ класта уҡыусыларҙың ата-әсәләре араһында йыш осрай. Мәктәптең талаптарын дөрөҫ аңлап мәктәпкә бөтә яҡлап булышлыҡ күрһәткән ваҡытта, үҙенең балаһының билдәләрен яҡшыртыу өсөн төрлө юлдарҙы ҡулланыусы ата-әсәләр ҙә була. Медалдар менән наградлауға эштәр тапшырған ваҡытта айырым ата-әсәләр был мәсьәләгә дөрөҫ ҡарамайҙар, үҙҙәренең балалары — уҡыусыларҙа ла ошондай уҡ ҡараш тәрбиәләйҙәр. Бының зарары бик ҙур.

Экзамендар барған ваҡытта уҡыусыларҙың ялын дөрөҫ ойоштороуҙы ла оноторға ярамай. Мәктәп етәкселәре, класс етәкселәре, ата-әсәләр һәр бер уҡыусының экзамендарға әҙерләнеүен иғтибар менән күҙәтергә, артыҡ күп эшләүгә һәм ялығыуға юл ҡуймаҫҡа, кәрәк булғанда уҡыусылар өсөн булған режимде ойоштороуға ҡарата актив ҡатнашлыҡ күрһәтергә тейештәр.

Мәктәптәр экзамендарҙың башланыуын ғына түгел, бәлки уларҙың тамамланыуын да тантаналы итеп байрамса билдәләргә тейештәр.

Халыҡ мәғарифе работниктәре экзамендар барышын тәьмин итерлек шарттар тыуҙырыу буйынса кәрәк булған эште тамамланылар. Экзамендарҙы кәрәкле документтар менән тәьмин итеү һәм кадрҙарҙы урынлаштырыу буйынса ҙур эш үткәрергә тура килде. Ошоно әйтеү генә етә, Башҡорт АССР-ының Мәғариф министерствоһы республикала өлгөргәнлек аттестатына экзамен ҡабул итеү буйынса 163 государство комиссияһы төҙөнө. Ошо комиссияларға 163 вәкил ебәрелде, шуларҙан 70 кеше башлыса алыҫтағы ауыл райондарына китте. Уларҙың бөтәһе лә юғары педагогик белемле.

Мәктәптәргә экзамендар өсөн кәрәкле күләмдә Мәскәүҙән алынған документтар тәржемә ителде, ҡайһы берәүҙәре урындарҙа әҙерләнде, типографияла баҫылып урындарға ебәрелде. 209 мең дана экзамен билеттәре, 265 исемдәге һәр төрлө текстар, темалар, экзамендар тураһында 5500 дана положение һәм инструкция әҙерләнде.

Ҡыҫҡаһы, экзамендарҙы уңышлы үткәреү өсөн бөтә шарттар тыуҙырылды.

Экзамендар уҡыу йылын тамамлау булып торалар. Уҡыусыларҙың бер йыл эсендә алған белемдәренә йомғаҡ яһаласаҡ. Тимәк, мәктәптәге бөтә уҡыу-тәрбиә эше тикшерелә. Шулай булғас экзамендар һәр бер мәктәптең уҡытыу-тәрбиә эше сифатын билдәләүгә ярҙам итә. Бының халыҡ мәғарифе бүлектәре генә түгел, бәлки партия, совет ойошмалары ла хәтерҙә тоторға тейештәр. Экзамендар көндәрендә партияның район комитеттәре һәм район Советы исполкомдары работниктәренең мәктәптәрҙә йышыраҡ булыуҙары, уларҙың мәктәптәргә мөмкин тиклем күберәк ярҙам күрһәтеүҙәре, һис шикһеҙ, ыңғай һөҙөмтәләр бирер ине.

Бурыс — мәктәптәрҙә экзамендарҙы ойошҡанлыҡ менән үткәреүҙән тора.

С. Әлибаев,
БАССР Мәғариф министры.

Һарыҡ йөнөнөң сифатлы булыуы өсөн

Башҡортостан колхоздарының һарыҡсылыҡ фермалары, ес йыллыҡ пландһы үтәү өсөн көрәште йөнлесине көсәйтеп. Һарыҡтарҙың тоҡом составын һәм государствоға тапшырыла торған йөндөң сифатын яҡшыртыуҙа байтаҡ уңыштарға өлгәштеләр.

1950 йылда республикабыҙ государствоға тапшырылған бөтә тир һарыҡ йөнөнөң 73 проценты нәҙек, ярым нәҙек һәм ярым ышыру йөн тәшкил итте. Шуның менән бергә, йөндө таҙа итеп тапшырыу килеше күтәрелде. Былтыр Шишмә, Бүздәк һәм Кушнаренко райондары айырыуса яҡшы сифатлы йөн тапшырҙылар. Дәүләкән, Кушнаренко, Әшһәй, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Көйөргәҙе һәм башҡа райондарҙың колхоз фермаларында һарыҡтарҙы тоҡом метисләштереү эше алып барыла. Был уларға сифатлы йөн етештереүҙе арттырҙы.

Һарыҡтарҙың тоҡомон яҡшыртыу һәм юғары сифатлы йөн етештереү колхоздарҙың доходын арттыра. Ләкин ҡайһы бер райондарҙа был эшкә етерлек иғтибар бирелмәй. Шуның өсөн улар государство түбән сифатлы йөн тапшыралар һәм доходтан кәм алалар. Былтыр Благовар районы колхоздары тапшырған йөндөң 90 проценте тәгәнәкле булды. Йылайыл һәм Өфө райондарында ла шундай уҡ етешһеҙлектәр булды.

Һарыҡтарҙың йөнен ҡырҡыу срогы йөндөң сифатына ҙур йоғонто яһай. Нәҡ ошо һәм ирҙә ҡырҡҡанда йөн бик тапҡыр — яҙғы осорға ҡырҡыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, былтыр Стәрлебаш районының «Культура», «Красный партизан» һәм Стәрлетамаҡ районының «Новый мир» колхоздары ундай тоҡом һарыҡтарҙы йөндәрен ҡыҙыл осорға ла ҡырҡҡандар. Ә көҙгө осорға ҡырҡылған йөн сифатһыҙ була. Сифатлы йөн өсөн түләү хаҡтары арта барыу ҡыуаны. Был колхоздарҙың доходы ҡыҫалыуына килтерҙе.

Сифатлы йөн етештереү өсөн һарыҡтарҙы ҡышҡы айларҙа айырыуса яҡшы ҡарау кәрәк. Һарыҡтарҙы көтөү һәм тәрбиәләү эшенә ҙур иғтибар итергә кәрәк. Бының өсөн фермаларҙа һарыҡтарҙы ҡарау ҡағиҙәләре аңлатыу, тәрбиәсе ҡаҡҡанына ҡарап кешеләрҙе баһалау талап итә. Һарыҡсылыҡ фермаларын кадрҙар һәм специалистар менән нығытырға кәрәк.

1951 йылда һарыҡтарҙы яҙғы ҡырҡыуға әҙерләргә һәм государствоға тапшырылған йөндөң юғары сифатлы булыуын тәьмин итергә кәрәк.

В. Чичканов.

Мәктәп баҡсаһында

Мраҡ башҡорт педагогия училищеһе уҡыусылары мәктәптең үҙ баҡсаһын булдырыу өсөн ҙур хеҙмәт күрҙеләр. 1949 йылда бик күп емеш-еләк һәм башҡа ағастар ултыртылды. Хәҙер мәктәп баҡсаһында 174 теп алма, 200 төп еләк-емеш үҫә. Был ағастар айырым уҡыусыларға беркетелгән. Уҡыусылар уларҙы яҡшы тәрбиәләйҙәр.

М. Булатов.

Яңы тирмәндәр төҙөлә

Сәмәғош, Сталин исемендәге ярылышлап колхозда быйыл двигатель ярҙамында эшләй торған тирмән төҙөлеп, эксплуатацияға тапшырылды.

Шулай уҡ «Холодный ключ» колхозында ла локомотив көсө менән бер тирмән эшләй башланы. Башҡа колхоздарҙа ла тирмәндәр төҙөү эше бара.

М. Ғәлиев.

ТЕАТР

Һүрәттә: «Тау әкиәте» балетынан бер күренеш. Фея Маһан ролендә артистка А. Ш. Байкова, егет—артист Ф. И. Әхмәтшин.

А. Червинский фотоһы.

Балалар уйынсыҡтары менән сауҙа итеү тураһында

Өфө ҡалаһында балалар уйынсыҡтары менән нигеҙҙә Ленин урамындағы балалар әйберҙәре магазинында, Карл Маркс менән Сталин урамдары мөйөшөндәге культмагтарҙа, 27-се номерлы һәм химсбыт магазиндарында, универмагта һатыу итәләр. Ләкин был магазиндарҙа балалар теләгән уйынсыҡтар аҙ була. Бәләкәй һәм урта ҙурлыктағы ҡурсаҡтар юҡ. Йомшаҡ әйберҙәрҙән эшләнгән айыу, ҡуян, бесәй, фил, Һ. б. ҙә ҡырмайҙар. Ҡағыҙ осҡаһынан һәм башҡа материалдан эшләнгән балалар ҡошсоҡтары, дейә, ишек, тағы, ҡаҙ, өйрәк, тағы башҡа уйынсыҡтар аҙ. Резина һәм целлулоид уйынсыҡтары аҙ. Балалар өсөн автомашиналар, трактор, йөк машиналары, тиҙ йөрөшлө машиналар, карауат, шкафтар һәм башҡалар табылмайҙар. Металдан эшләнгән, шул иҫәптән, уҫә йөрөй торған уйынсыҡтар бөтөнләй юҡ тип әйтерлек.

Резина һәм целлулоид уйынсыҡтар аҙ. Өфө магазиндарында бик һирәк була. Черниковск, Октябрьский, Белорет кеүек ҡалаларҙың магазиндарында ла ошондай уҡ хәл.

Урындағы торгтар Управлениеһенең һәм Промторгтың уйынсыҡтар ҡайтарыуҙы ойоштороу эше менән шөғөлләнеүсе махсус кешеләре юҡ. Шулай итеп, уйынсыҡтарҙы алдырыу үҙ ағышына ҡуйылған. Тура килә икән алына, тура килмәй икән республика магазиндарында уйынсыҡтар ҙа булмай. Башҡортостандың үҙендә уйынсыҡтар етештереү бик йомшаҡ ҡуйылған. Магазиндарҙа тик урындағы промышленность тарафынан етештерелә торған туптар һәм уйынсыҡ пистолеттар генә күренә. Ә промкооперация һәм колхоз

промсоюздың уйынсыҡтары потребителдәр ҡурмайҙар, тип әйтерлек.

Һуңғыһа тиклем Өфөлә промкооперацияның «Уйынсыҡтар» исемле артеле була торғайны. Ул яҡшы сифатлы һәр төрлө балалар уйынсыҡтары эшләп сығара ине. Ләкин ни өсөндер был артель ошо йыл тиклем әҙәкка бастырылғаны юҡ ине. Союз-утилдең ҡарышын йәшештерел алынып тороп уйынсыҡтар етештереүсе предприятиеһе ябылған.

Бөрө, Благовещен, Стәрлетамаҡ, Баймаҡ ҡалаларында һәм башҡа урындарҙа ла уйынсыҡтар эшләп сығармайҙар.

Башҡортостан ҡалаларында балалар уйынсыҡтары менән сауҙа итеүҙең былай торошо менән һис тә килешеп булмай. Республикабыҙ уйынсыҡтар ҡитерсүҙә һәм урында эшләп сығарыуға мөмкин булған уңай республиканың үҙендә етештереүҙә мәсьәләһе менән серьез шөғөлләнергә тейешле кешеләр бар. Шуның өсөн, сауҙа ойошмаларының ойошмалары етештергән йыл хатта балаларҙың ағасты эшләнгән арбаларын да башҡа әкәнән, атап әйткәндә, Куйбышевтан килтерергә мәжбүр булдылар.

Йәйге сезон килеп етте. Промкооперация һәм урындағы промышленность, шулай уҡ Башлеспромсоюз балаларҙың йәйге уйынсыҡтарын — городки, крокет, тагароток йөрөргә торған төгәрмәс, бәләкәй тачкалар, арбалар, автомобиль, тырма, көрәк, ҡармаҡ һаптары, ҡубалаҡ тотҡосҡар һәм башҡа шундай кеүек уйынсыҡтарҙы массовый рәүештә етештереүгә тотонорға тейештәр.

Ә урындағы торгтар Управлениеһе һәм тимер юл, нефтселәр ОРС-тары уйынсыҡтарҙы систематик алдырыуҙы тәьминләр.

М. Грахов.

ҠЫҪҠА ХӘБӘРҘӘР

Учалы Районның «Октябрь» колхозында кирбес заводы бер нисә йыл бушына эшләп килә. Ләкин уның етештереүсәнлеге түбән ине.

Быйыл колхоз правлениеһе заводты ҡайтанан ремонтлап, байтаҡ ҙурайтты. Ул эшләй башланы инде. Быйыл заводтан 40 мең һум доход алыу планлаштырылды.

З. Әһлиуллин.

Зианчура районы Күгәрсен ете йыллыҡ мәктәбенен ата-әсәләр комитеты (председателе Сталин исемендәге колхоздың ферма мөдире иптәш Шәрипов) планлы эш алып бара. Уҡыу йәшендәге балалар 100 проценте менән мәктәпкә йәлеп ителгәндәр. Ата-әсәләр өсөн системалы рәүештә лекциялар һәм доклад тар ойоштоғола.

Ф. Кәримов.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 17 май. (ТАСС). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары әҙерлек кәңәшмәһенең 17 майҙа Британия вәкиле Дәвис председателлегендә булып үткән 54-се ултырышында СССР делегацияһы сит ил эштәре министрҙәре Советының көн тәртибе буйынса килешеүгә өлгәшеүгә йүнәлтелгән яңы тәҡдим индерҙе.

Беренсе булып сығыш яһаған СССР вәкиле А. Громыко Германияны демилитаризациялауға ҡағылған подпункт өсөн көн тәртибендәге урынға ҡарата мәсьәләгә туҡталды.

Совет делегацияһы был мәсьәләгә көн тәртибендә уның әһәмиәтенә ярашлы булған урындың бирелмәүе менән ризалаша алмауын күрһәткәйне инде, — тине Громыко. — Шуға күрә совет делегацияһы Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләгә көн тәртибенең беренсе пунктының эсендә конкрет мәсьәләләр иҫәбендә беренсе урындың бирелеүен талап иткәйне һәм талап итә. Ләкин беҙҙең был мәсьәлә буйынса кәңәшмәлә дөйөм тел таба алмауыбыҙ асыҡланды. Был ваҡиға тик юғарыла әйтелгән подпункттың көн тәртибендә ниндәй урын —беренсе йәки икенсе урынды алып торорға тейеш булыуы тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советы сессияһында хәл ителәүе менән ризалашырға ғына ҡала. Үҙенән-үҙе билдәле, беҙ был подпункт редакцияһының килешелгән булыуынан сығып эш итәбеҙ, ул турала беҙҙең арала килешеүгә өлгәшелгәйне инде. Шуға күрә совет делегацияһы Германияны демилитаризациялауға ҡағылған подпункт өсөн көн тәртибендә урын тураһында мәсьәләнең килешелмәгән көйөнсә ҡалыуы тураһында әйтелгән махсус иҫкәрмәне көн тәртибенә индереү тураһында ес держава делегацияһының тәҡдиме менән ризалашырға әҙер.

АҠШ вәкиле Джессеп, совет делегацияһының яңы тәҡдиме айҡанлы тәүге тәртиптә сығыш яһап, Германияны демилитаризациялау тураһындағы подпункттың көн тәртибендәге урыны хаҡындағы мәсьәләне министрҙәр Советына тапшырырға риҙа булып, СССР делегацияһының килешеүгә өлгәшеү юлында алға табан тағы ла бер аҙым яһағанлығын таныны.

Ләкин АҠШ делегацияһы үҙ яғынан ошондай уҡ аҙымды яһау теләгән күрһәтмәне. Джессеп Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенең [illegible] пункты сифатында министрҙәр Советына тапшырыуға ҡаршы килеүҙә дауам [illegible].

СССР вәкиле Громыко Джессепкә бирел былай тине:

— Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә буйынса совет делегацияһының позицияһы етерлек тиклем тулы әйтелгәйне. Беҙ, был мәсьәлә, ҡоралланыуҙы, ҡораллы көстәрҙе ҡыҫҡартыуға ҡағылған икенсе бер килешелмәгән пункт уҡ, һәм шулай уҡ, бөгөнгө ултырышта беҙ белдергәнсә, Германияны демилитаризациялау тураһындағы подпункттың көн тәртибендәге урыны хаҡындағы мәсьәлә кеүек үк министрҙәр Советына тапшырылырға тейеш, тип иҫәпләйбеҙ.

Громыконан һуң сығыш яһаған Бөйөкбритания вәкиле Дәвис Атлантик пакт һәм сит территорияларҙа Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенең килешелмәгән пункты сифатында министрҙәр Советына тапшырыуға бөтөнләйгә нигеҙһеҙ ҡаршы килеүҙә дауам иттерҙе.

БМО Генеральный Ассамблеяһының пленар ултырышы

НЬЮ-ЙОРК, 18 май. (ТАСС). БМО Генеральный Ассамблеяһы 18 майҙағы пленар ултырышында, АҠШ идара итеүсе круггтарының күрһәтеүе буйынса хәрәкәт итеп, Ҡытайға тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында Америка резолюцияһын хупланы. Был резолюцияны яҡлап 47 тауыш бирелде. Афғанстан, Бирма, Египет, Индия, Индонезия, Пакистан, Швеция һәм Сирия тауыш биреүҙә ҡатнашыуҙан тыйылып ҡалдылар.

Советтар Союзы, Украина ССР-ы, Белорус ССР-ы, Польша һәм Чехословакия, был мәсьәләне хәл итергә Генеральный Ассамблея хоҡуҡлы түгел, тигән нигеҙҙә тауыш биреүҙә ҡатнашмаһылар.

Политик комитетта тауыш биргән ваҡытта үҙ хөкүмәтенән инструкциялар булмау айҡанлы тыйылып ҡалған Эквадор делегаты Генеральный Ассамблеяның пленар ултырышында был резолюция өсөн тауыш бирҙе. 17 майҙа комитет ултырышында булмаған Люксембург делегаты ла шулай уҡ резолюция өсөн тауыш бирҙе.

Тауыш биреүҙә үҙенең ни өсөн ҡатнашмауын аңлатыу өсөн сығыш яһаған СССР делегаты Я. А. Малик, АҠШ Ҡытайға тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында законһыҙ резолюция кеүек резолюциялар ярҙамында БМО-ны үҙ агрессияһының ҡоралына әүерелдерергә маташа, тип белдерҙе. АҠШ резолюцияһын яҡлаған агрессорлыҡ блогының бер генә члены лә резолюцияның БМО Уставына ярашлы булыуын иҫбатларға тырышманы, тип күрһәтеп, Малик, был факт Америка тәҡдименең законһыҙ булыуы айҡанлы ғәжәпләнерлек түгел, тине.

Украина ССР-ы, Белорус ССР-ы, Польша һәм Чехословакия делегаттары [illegible] ҡа, БМО флагы менән йәшеренеп, [illegible] сияны киңәйтергә мөмкинлек бирер [illegible] сатып торған АҠШ-тың законһыҙ резолюцияһын шулай уҡ ғәйепләнеләр.

Индия вәкиле Рау Политик [illegible] ултырышында үҙе әйткән дәлилдәрҙе [illegible] батланы, был дәлилдәр буйынса [illegible] тауыш биреүҙә ҡатнашыуҙан тыйылып ҡалды.

Үҙҙәренең тауыш биреүҙәренең [illegible] тәре тураһында белдереүҙәр яһаған [illegible] илдәр делегаттарының сығыштарынан һуң Генеральный Ассамблеяның Ҡушма Штаттарҙы тыңлаусан күпселеге Америка резолюцияһын ҡабул итте.

Шуның менән Генеральный Ассамблеяның пленар ултырышы ябылды.

АҠШ сенатында сенатор Джонсондың резолюцияһы

ВАШИНГТОН, 17 май. (ТАСС). Төньяҡ Корея ғәскәрҙәренең һәм Ҡытай добровольцтарының яңы һөжүме тураһында Кореянан алынған хәбәрҙәр айҡанлы сенатор Джонсон сенатҡа резолюция индергән, унда, сенат утты туҡтатырға һәм 25 июндән Корея менән килешеү иғлан итергә саҡырып мөрәжәғәт итһен, тип тәҡдим ителә.

Резолюция шулай уҡ был датаға тиклем «Берләшкән Милләттәр» ғәскәрҙәрен 38-се параллелдән көньяҡҡараҡ, ә Төньяҡ Корея һәм Ҡытай ғәскәрҙәрен төньяҡҡараҡ сигенергә саҡыра.

Резолюция тексы: «Өсөнсө бөтә донъя һуғышы һөҙөмтәһендә цивилизацияның һәләк булыуына юл ҡуйыу хәҙерге быуат кешеләренә лайыҡлы булмаған тулы аҡылһыҙлыҡ булыуы айҡанлы;

Корея һуғышы, күренгәнсә, хәл иткес һөҙөмтәләр килтерә алмаған һәм расалар араһында ныҡлы күрә алмаусанлыҡ тыуҙырған ышанысһыҙ конфликт булыу айҡанлы;

сикләнелгән һуғыш, сикләнелгән йәки һүнеп барыусы ут кеүек үк, сиктән тыш ҡурҡыныслы, сөнки уның теләһә ниндәй моментта бөтә донъя янғынына әүерелә алыуы айҡанлы;

Төньяҡ Корея һәм Көньяҡ Корея, Ҡытай ғәскәрҙәре һәм Берләшкән Милләттәр ғәскәре бер миллиондан артығыраҡ кешене юғалтыуҙары, шул уҡ ваҡытта хәҙергә ваҡытҡа тиклем өлгәшелгән берҙән-бер күренгән һөҙөмтә Корея халҡы өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәлгенләктәр генә булыу айҡанлы;

һуғыш алып барыуҙың хәҙерге ваҡытҡа тиклем ҡулланылмаған үлем килтереүсе һәм емерткес средстволарын үҫтереү өлкәһендә ғәйәт ҙур прогресҡа өлгәшелеү, улар үҙҙәренең хәрәкәттәренең көстәре яғынан һәм тыуҙырған ҡурҡыныслыҡтары яғынан бик ҙур булыу айҡанлы;

яңы миллионлаған кешеләрҙе үлтереү һөҙөмтәһендә ваҡытлы еңелеүселәргә тыныслыҡты көсләп тағырға мөмкинлеге тыныслыҡ тыуҙырмау айҡанлы;

АҠШ халҡының Ҡытай халҡына традиция буйынса ҙур хөрмәт менән ҡарауы һәм ҡарауҙы дауам иттереүе айҡанлы;

АҠШ халҡының Монроэ доктринаһы принциптәренең аңлылығын күптән таныуы, уның Азияға ҡарата ҡулланғанда «Азия азиялылар өсөн» тип әйтелеүе айҡанлы;

Америка халҡының политикаһы күптән үк бер генә илдең дә үҙенең идара итеү формаһын ниндәй ҙә булһа башҡа илгә йәки халыҡҡа таратырға маташмаҫҡа тейеш булыуына, ләкин уның бәләкәйме, бөйөкмө һәм ҡеүәтлеме булыуына ҡарамаҫтан, һәр бер халыҡҡа көрһәтәләрһеҙ, яңау йәки ҡурҡыуһыҙ идара итеү формаһын һәм үҙенең тормош [illegible] ирекле билдәләү хоҡуҡының хас булыунан тороуы айҡанлы;

Америка Ҡушма Штаттары халҡының политикаһы һәм теләктәре традиция буйынса ғәҙел һәм оҙаҡҡа һуҙылған тыныслыҡҡа ынтылыуҙан тороуы айҡанлы;

Аллаһан ҡурҡыусы һәм тыныслыҡ һөйөүсе кешеләр өсөн кешеләрҙе файҙаһыҙға бөтөрөүҙе туҡтатырға ысын күңелдән тырышыу өсөн ваҡыттың бер ҡасан да һуң булмауы айҡанлы;

Ошоноң менән ҡарар ителә: сенат фекере буйынса Берләшкән Милләттәр Кореяла хәҙерге ваҡытта һуғыш алып барған бөтә илдәргә һәм бөтә группаларға утты туҡтатырға һәм 1951 йылдың 25 июнендә Корея ваҡыты менән иртәнге дүрт сәғәттә үҙ көсөнә инеүсе килешеү иғлан итергә саҡырып мөрәжәғәт итергә тейеш;

был ваҡытҡа тиклем Берләшкән Милләттәрҙең ғәскәрҙәре 38-се параллелдән көньяҡтараҡ пункттарға, ә уларға ҡаршы торған ғәскәрҙәр төньяҡтараҡ пункттарға сигенәсәктәр;

һәм Кореяла һуғыш барышында алынған бөтә пленныйҙар 1951 йылдың 31 декабренә тиклем алмаштырыласаҡтар һәм ғәҙәттәге дипломатик вәкилдәрҙән башҡа Корея милләтенән булмаған бөтә кешеләр хәрби, шулай уҡ хәрби булмағандары ла Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореянан китәсәктәр».

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 18 май. (ТАСС). Корея Халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһы баш командованиеһенең 18 майҙа тапшырылған белдереүендә, бөтә фронттарҙа ла Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтары менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Америка-Англия интервенттәре ғәскәрҙәренең контратакаларын уңышлы кире ҡағалар, уларҙы көньяҡҡа табан сигендерәләр һәм йәнле көстә һәм техникала уға ҙур юғалтыуҙар яһайҙар, тип әйтелә.

Көнһылыу

(Хикәйә)

Промысла директоры Бураибаев «Социализм пленда хеҙмәт» тигән темаға лекцияға әҙерләнә ине һәм ул секретарен саҡырып алды ла кабинетҡа берәүҙе лә индермәҫкә ҡушты. Ленин — Сталин томдарын һәм уларҙан яҙылып алынған цитаталарҙы өҫтәлдең бер яғына, художестволы әҙәбиәт китаптарын икенсе яғына рәтләп ҡуйҙы, һәм ул яҙа башланы.

Бурапбаев ҡалын елкәле, ҙур кәүҙәле кеше. Уның хәрәкәттәре киң һәм иркен. Ҙур булмаған ҡоңғорт күҙҙәре, ҡуйы ҡаштары аҫтынан аҡыллы һәм тыныс ҡарайҙар.

Ул лекцияны нимәнән башлап китеү тураһында күп уйланы һәм тамам аптыраны. Бураибаев асырғыланып аржырыбуй һыҙылып бөткән нәүбәттәге битте кәрзинкаға ташлаған саҡта, парторг Васильев инеп инде.

Васильев урта буйлы, ҡаҡса йөҙлө кеше. Уның зәңгәр күҙҙәре яҡты һәм үтә күренеүсән, әйтерһең дә һунарсының алыҫтарға ҡарап өйрәнгән күҙҙәре. Шуның менән бергә, унда иғтибарлы, көсәргәнешле фекер йөрөтөп, төндәр буйы яҙыу өҫтәле артында ултырыусы кешенең күҙҙәре балҡый.

— Йә, эштәр нисек, яҙып буламы һуң? — тине Васильев, өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа ултырып.

— Булыуын булыр ҙа ул, тик бына башлап китә алмай, теңкәм ҡороно.

— Нигә, әллә үҙенә оҡшамаймы?

— Юҡ, эш унда түгел. Кирәһенсә, был лекция мине шул тиклем мауыҡтырҙы. Хатта төштәремдә лә күрә башланым. Уйлаған һайын, уҡыған һайын тема үҙен тәрәнерәк өйрәнеүҙе талап итә, үҙенең әсәлегенә лайыҡлы форма һорай.

— Яҡшы, яҡшы. Шулай булырға тейеш тә ул. Сөнки совет кешеһенең саф намыҫы ла, таң ҡалырлыҡ батырлығы ла, һүнмәҫ даны ла хеҙмәттә һынала, уның ысын бәхете, киләсәккә бөтмәҫ-төкәнмәҫ ышанысы хеҙмәттә күренә.

— Шуға ла мин теманың бөтә тәрәнлеген ике сәғәттә генә асып һала алмам, тип ҡурҡам.

— Юҡҡа. Һинең көсөң дә, белемең дә етерлек. Унан һуң, тәүге тапҡыр лекция уҡымайһың.

— Уныһы дөрөҫөн дөрөҫ. Шулай ҙа бик тулҡынланам. Һин ҡалай уйлайһың, лекцияны нисегерәк ҡорғанда, башлап алып киткәндә яҡшыраҡ булыр?

— Был турала тәпләрәк уйларға кәрәк. Бының өсөн, беренсенән, юлбашсыларҙың һүҙҙәрен, хәҙерге тормош талаптарынан сығып ҡуллана белергә кәрәк. Сөнки улар беҙгә юнәлеш биреүсе, юл күрһәтеүсе маяҡтар. Икенсенән, тормошто ентеклерәк өйрәнергә. Тик бына үҙебеҙҙең коллектив кешеләре генә лә һинең лекцияңа ҡиммәтле материал була ала.

Бурапбаев ҡалын кәүҙәле, оло йәштәрҙәге кеше булыуға ҡарамаҫтан, креслонан бик сапсан тороп, кабинет буйлап йөрөй башланы. Был унда тәрән тулҡынланыу билдәһе ине. Шул ваҡытта ишек артында кемдеңдер ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшеүе ишетелде. Ишектә секретарь күренгәс, Бурапбаев:

— Кем даулаша унда? — тип һораны.

— Һеҙгә, Ғәлим Бурапбаевич, оператор...

Бурапбаев ҡуйы ҡаштарын йыйырып, секретарен бүлде:

— Хәҙер ҡабул итә алмайым, ваҡытым юҡ.

Секретарь сығып киткәс:

— Һин, Илья Кузьмич, бигерәк арттырып ебәрәһең, — тип Васильевка ҡараны.

Ишектән атылып ингән бер ҡыҙ:

— Инергә рөхсәт итегеҙ? — тине.

Директор боролоп ҡарамайынса ғына, асыулы ҡалын тауышы менән:

— Һеҙгә әйткәндәрҙер бит инде, мин буш түгел.

— Мин бер генә минутҡа.

Бурапбаев боролоп ҡарап:

— Ә Көнһылыу, һеңлем, хәҙер булдыра алмайым.

— Ғәлим ағай, мин күпкә түгел, личный һорау менән генә.

— Бик ныҡышмалы ҡыҙ булып сыҡтың әле, — тине Бурапбаев, йомшара төшөп, — үҙеңде яҡшы оператор итеп ихтирам итәм. Шулай ҙа хәҙергә ҡалдырып торайыҡ, яңы тура килгәндә иркенләп һөйләшербеҙ, ә...

— Юҡ инде, Ғәлим ағай, ҡалған эшкә ҡар яуа, ти. Миңә был мәсьәләне мөмкин тиклем тиҙерәк хәл итергә кәрәк, — тине Көнһылыу үҙенең саф яңғырауыҡлы тауышы менән.

— Йә, улай булғас, тик тиҙерәк һөйлә! — тине Бурапбаев, һинән ҡотолоп булмаҫ инде тигән сырай менән.

— Мин һеҙгә кәңәшкә һәм ярҙам һорап килдем.

— Ни булды?

— Әллә ниндәй ғәҙәттән тыш нәмә булыуын булманы. Мин биш скважина хеҙмәтләндерергә һәм уларҙы социалистик һаҡлыҡҡа алырға уйлайым.

— Шулмы һинең личный һорауың? — тине Бурапбаев, ғәжәпләнеп.

— Әлбиттә, мин һорайым бит, икенсе кеше түгел дәбаһа.

— Да... тине быға тиклем көләмһерәп ҡарап торған парторг, — был личный мәсьәлә генә түгел, бәлки государство әһәмиәтенә эйә булған мәсьәлә.

— Мин дә шулай уйлағайным, — тине Көнһылыу, шатланып.

— Һуң, үҙеңә ауыр булмаҫмы, — тине директор Көнһылыуҙың мөйөл кеүек күҙҙәренә тура ҡарап.

— Юҡ, булмаҫ.

— Ҡайһы скважиналарҙы алмаҡсы, нисек хеҙмәтләндермәксе булаһың?

Үҙемдекеләрҙән башҡа Нарыш тауының көнбайыш итәгендәге скважиналарҙы. Уларҙың аралары алыҫ түгел. Бынан тыш, скважиналарға автомат ҡырғыс ҡуйырға уйлайым.

— Йә, йә..., тине парторг Көнһылыуға, шулай батырыраҡ бул тигән теләк менән йылмайып.

— Автомат ҡырғыс оператор эшен еңеләйтеүҙән башҡа, уның эш ваҡытына бик күп экономия яһаясаҡ. Шуға күрә биш скважинаны хеҙмәтләндереү ауыр булмаҫ.

Автомат ҡырғыс Көнһылыуҙың күптәнге хыялы ине. Ул күп эҙләнде, әллә ни тиклем китаптар уҡыны. Күпме йоҡоһоҙ төндәр, интегеүле минуттар кисерҙе. Һәм, ниһайәт, еңеү шатлығына ла ирешге ул. «Эйе, дөрөҫ, — тип уйланы директор, — бына бит ул ниндәй. Ә һин, иптәш начальник, — тине Бурапбаев үҙ-үҙенә ҡаты ирония менән, — яңының тыуып килгәнен күрә белмәгәнһең. Өҫтәүенә, тормош һулышын индермәҫкә тырышып, секретареңде һаҡсы иткәнһең. Эх, һин, чиновник».

Бурапбаев, ыждан ғазапланып ваҡытта ғына була торған ҡалтырауыңҡыраҡ тауыш менән, Көнһылыуҙан:

— Был турала кем менән һөйләштең, — тип һораны.

— Ҡыҙҙар менән.

— Ниндәй ҡыҙҙар менән.

— Үҙебеҙҙең участка комсомолкалары менән.

— Һуң, улар нимә тиҙәр.

— Директорға бар, әгәр яраҡлы тапһа, һинең кеүек эшләрбеҙ, тинеләр.

— Әгәр риза булмаһам — тине Бурапбаев ярым серьез, ярым шаярып.

— Иптәш Васильевка, — тине Көнһылыу, парторгҡа күҙ ташлап, ҡыҙара биреп, — улай ҙа булмаһа, трестҡа, ҡала комитетена етер инем.

— Директор ҙа, парторг та Көнһылыуҙың нескә, зифа буйына, билена тиклем етеп торған ҡалын толомына, киң һәм бейек маңғай аҫтынан йылтырап торған күҙҙәренә һоҡланып ҡаранылар. Уларҙың шулай текләп ҡарауына Көнһылыуҙың былай ҙа алһыу түңәрәк йөҙө тағы ла ныҡыраҡ ҡыҙарҙы.

Бурапбаев тағы ла кабинет буйлап йөрөй башланы. Васильев тәҙрәнең шторын ике яҡҡа айырып, тышҡа ҡараны.

Унда бейек булмаған тауҙар өҫтөндә нефть вышкалары һаҡсылар кеүек ғорур һәм мәһабәт баҫып торалар ине. Улар аяҙ, тыныс күкте үҙ елкәләрендә күтәреп торған кеүек күренделәр.

Директор Көнһылыуға тағы ла бер ентекләп ҡараны ла, парторгҡа мөрәжәғәт итеп:

— Илья Кузьмич, мин хәҙер лекцияны нисек башлап алып китергә беләм шикелле, — тип йылмайҙы.

Парторг директорға хуплап ҡараны ла, килеп Көнһылыуҙың ҡулын ҡыҫты һәм:

— Дөрөҫ, иптәш Бурапбаев, лекцияңды бына ошо ҡыҙҙың эш тәжрибәһенән башлап китһәң бик яҡшы булыр, — тине.

Ю. Әхмәдиев.

Октябрьский ҡалаһы.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — иртән «ТАУ ӘКИӘТЕ», кис «СИВИЛЬ ЦЫРЮЛЬНИГЕ».

Рус драма театрында — иртән «[illegible] БАЙЫШТАҒЫ СИК», кис «ТОРМОШ ӨСӨН КӨРӘШ».

«Октябрҙә» — «ЯҢЫ БОЕЦТАР САФҠА БАҪЫР».

«Салауатта» — көндөҙ «СОВЕТ СЫУАШИЯҺЫ» һәм «ЯҢЫ ШАНХАЙҘЫ», кис «МИНЕ КӨТ».

«Уралда» — «УН ӨС».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «БЕРЕНСЕ СТАРТ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

Ч01974 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсөндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 99 (8816)
1951 йыл
22 МАЙ
шишәмбе

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЕНДӘ. КОМБАЙНДАРҘЫ ҺӘМ БАШҠА УРОЖАЙ ЙЫЙНАУ МАШИНАЛАРЫН РЕМОНТЛАУҘЫҢ БАРЫШЫ ТУРАҺЫНДА (1-се бит).

МӘКТӘПТӘРҘӘ ЭКЗАМЕНДАР (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. З. Яппаров. — Баҫыуҙа агитацион-массовый эште беҙ нисек ойоштороҙоҡ (2-се бит).

ТУЙМАЗЫ ҺӘМ БАУЛЫ НЕФТСЕЛӘРЕНЕҢ СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШЫ. Ғ. Үлмәсов. — Бөйөк Сталин хөрмәтенә (2-се бит).

Ш. Мостафин. — Тағы ла бер тапҡыр хужалыҡ иҫәбе тураһында (2-се бит).

Е. Азрильян. — Пәш рационализаторҙар (2-се бит).

ОБЩЕСТВЕННЫЙ МАЛСЫЛЫҠТЫ ҺӘР ЯҠЛАП ҮҪТЕРЕРГӘ! Д. Коврижных. — Мал аҙығы әҙерләү бригадаларының эшен яҡшыртайыҡ (3-сө бит).

М. Сәхәүетдинова. — Объектив сәбәптәр ышығында (3-сө бит).

С. Мальков. — Тракторҙарҙы техник тәрбиәләүҙең сифатын күтәрергә (3-сө бит).

КОРЕЯ ХАЛЫҠ-ДЕМОКРАТИК РЕСПУБЛИКАҺЫ СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРЕНЕҢ БЕЛДЕРЕҮЕ (4-се бит).

АНГЛИЯНЫҢ СОВЕТТАР СОЮЗЫНДА БУЛҒАН ЭШСЕЛӘР ДЕЛЕГАЦИЯҺЫНЫҢ ПРЕСС-КОНФЕРЕНЦИЯҺЫ (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Һәр бер колхозда малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырырға

Быйыл общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын уңышлы үтәү буйынса колхоздар, совхоздар, ауыл хужалығы органдары һәм специалистәре алдында айырыуса ҙур бурыстар тора. 1951 йыл — өс йыллыҡ планды үтәүҙең һуңғы һәм хәл иткес йылы ул.

Малдар һанының тиҙ артыуы һәм продукт биреүсәнлегенең күтәрелеүе беренсе сиратта ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыуға бәйләнгән. Быны алдынғы райондарҙың, колхоз һәм совхоздарҙың эш тәжрибәләренә яҡшы күрергә була. Партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары аҙыҡ базаһы булдырыу тураһында даими хәстәрлек күргән урындарҙа малдарҙы ҡышлатыуһыҙ ҡышлаталар һәм йыл әйләнәһенә юғары продукт алалар.

Был өлкәлә Зианчура районы колхоздарының уңыштары айырыуса ҙур. Былтыр һуңғы йылдарҙа тәбиғи болонлоҡтарҙы, көтөүлектәрҙе яҡшыртыу, уның уңдырышлылығын күтәреү буйынса байтаҡ саралар үткәрелде. Үлән һәм тамыр аҙыҡтары сәсеү майҙаны күп артты. Бөтә эреләтелгән колхоздарҙа ла мал аҙығы әҙерләү буйынса махсус бригадалар булдырылды. Фермалар эш һөйөүсән, тәжрибәле кадрҙар менән нығытылды. Быны был сараларҙа районға алдынғылар сафына сығырға мөмкинлек бирҙе. Колхоздар өс йыллыҡ планды уңышлы үтәү менән бергә, йылҡысылыҡ үҫтереүҙең ике йыллыҡ планын да срогынан алда үтәнеләр. Күптән түгел был районға ошо йылдың беренсе кварталында малсылыҡ буйынса социалистик ярышта беренселекте алған өсөн Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

Тотош алғанда, республикабыҙ ауыл хужалығының был мөһим тармағын үҫтереүҙә һаман да артта ҡалыуҙа дауам итә әле. Күпселек райондар общественный малсылыҡ үҫтереү планын йыл һайын үтәмәй киләләр һәм түбән продукт алалар. Быны төп сәбәбе урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының, колхоз, МТС һәм совхоз етәкселәренең һәр бер хужалыҡта общественный малдарҙың ихтыяжын ҡапларлыҡ аҙыҡ базаһы булдырмауҙарында. Партия һәм хөкүмәтебеҙҙең был тураһағы серьез күрһәтмәләренән үҙҙәренә тейешле һығымта яһамауҙарында. Шул сәбәпле күп фермалар ла етер-етмәҫтән аҙыҡһыҙ ҡалалар һәм район етәкселәре государстволан ярҙам һорап мөрәжәғәт итергә мәжбүр булалар.

Салауат районы тәбиғи болонлоҡтарға, көтөүлектәргә бай булыуы менән бик күп райондарҙан өҫтөн тора. Бында болонлоҡтарҙы, көтөүлектәрҙе яҡшыртыу, үлән һәм тамыр аҙыҡтар сәсеү юлы менән һәр бер колхозда, совхозда аҙыҡ базаһын нығытыу өсөн тулы мөмкинлектәр бар. Киреһенсә ҡаршы, колхоз, МТС һәм совхоз етәкселәре ул мөмкинлектәрҙе сиктән тыш насар файҙаланалар. Аҙыҡ етешмәүҙән быйыл ҡыш һәм яҙ айҙарында бик күп малдың кәмеүенә юл ҡуйҙылар. Күп колхоздарҙа мал аҙығы рационының — 80 процентын һалам тәшкил итә. [illegible] әҙерләнмәйенсә ашатыла. Күп йыллыҡ үләндәр, силос һәм тамыр аҙыҡ культуралары сәсеү планы йыл һайын үтәлмәй ҡала. Шуға күрә район малсылыҡты үҫтереүҙә бик артта ҡала.

Район етәкселәре был хәлдә төҙәтеү, һәр бер хужалыҡта ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн конкрет саралар күрмәйҙәр. Улар үҙҙән ҡыштың әсе һабаҡтарынан үҙҙәренә әле булһа тейешле һығымта яһамағандар. Бында быйыл да мал аҙығы культураларын сәсеүгә тейешле иғтибар бирмәнеләр. Ошо көнгә тиклем районда сәсеү планы үтәлмәгән. Белоҡатай, Краснокам, Бөрө, Кушнаренко, Мишкә һәм башҡа күп кенә райондарҙа ла мал аҙығы культураларын сәсеүҙә өҙәләр.

Урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының бурысы һәр бер колхоздың һәм совхоздың был культураларҙы сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауына өлгәшеүҙән, сәсеүлектәрҙе хәстәрлек менән тәрбиәләп, унан юғары урожай алыуҙы тәьмин итеүҙән тора.

Партия һәм хөкүмәттең күрһәтмәһе буйынса һәр бер колхозда мал аҙығы әҙерләү буйынса махсус бригадалар ойошторолорға тейеш. Элек колхоздар ваҡ-ваҡытта бындай бригадалар ойоштороуға эшсе һәм тартыу көстәре етешмәй ине. Ә хәҙер колхоздарҙың эреләтелеүе бынға ыңғай шарттар тыуҙырҙы. Был бригадаларға мал аҙығы культураларын үҫтереү, үҙҙәренә беркетелгән участкаларҙағы тәбиғи болонлоҡтарҙан бесән йыйнап алыу, силос әҙерләү, болонлоҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу, үлән һәм тамыр аҙыҡтары етештереү бурыстары йөкмәтелә. Бындай бригадалар үҙ ваҡытында ойошторолоп, даими эш алып барған урындарҙа общественный малсылыҡ ныҡлы аҙым менән үҫә.

Ләкин республикабыҙҙың байтаҡ райондарында әле булһа бригадалар төҙөү тамамланмаған. Күп урындарҙа улар формаль, исем өсөн генә ойошторолғандар. Уларҙы тәжрибәле, инициативалы колхозсылар менән нығытыуға тейешле иғтибар бирелмәй. Бригадалар менән етәкселек итеүгә ҡайһы бер колхоздарҙа был эште ойоштороуға һәләтле булмаған, колхозсыларҙың ышанысын аҡламай торған осраҡлы кешеләрҙе ҡуялар. Район Советы исполкомдарының, МТС һәм колхоз етәкселәренең бурысы бына был хаталарҙы ашыҡыс төҙәтеүҙән, һәр бер колхозда бөтә йыл әйләнәһенә эшләрҙәй даими бригадалар ойоштороуҙан, уларға етерлек һанда эшсе һәм йәнле тартыу көстәре, инвентарҙар беркетеүҙән һәм уларҙың эшен яҡшыртыуҙан тора.

Республикабыҙ тәбиғи болонлоҡтарға, бесәнлектәргә һәм көтөүлектәргә сикһеҙ бай. Күп колхоздарҙа улар мал аҙығы етештереүҙә төп сығанаҡ булып торалар. Тәбиғи болонлоҡтарҙың, көтөүлектәрҙең урожайын һәр бер гектарҙа берәр центнерға ғына күтәргәндә лә республикабыҙ буйынса бик күп өҫтәмә йәшел үлән алырға, меңәрләгән баш малды йыл әйләнәһенә ашатып сығарырға була. Ә алдынғы колхоздар болонлоҡтарҙы, көтөүлектәрҙе дөрөҫ тәрбиәләү, рациональ файҙаланыу һөҙөмтәһендә уның гектарынан хәтта 2—3 тапҡырға артыҡ урожай алалар.

Машина-трактор станциялары был өлкәлә үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарға ҙур ярҙам күрһәтә алалар һәм күрһәтергә бурыслылар. Ләкин республикабыҙҙың күп кенә МТС етәкселәре колхоздар менән төҙөшкән договорҙың был пунктын үтәүгә сиктән тыш яуапһыҙ ҡарайҙар. Бай трактор паркын болонлоҡтарҙы яҡшыртыуҙа, бесән һәм силос әҙерләүҙә файҙаланмайҙар.

Хәҙер общественный малсылыҡ өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыуҙың хәл иткес көндәре. Урындағы партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары, колхоз, МТС һәм совхоз етәкселәре сәсеү эштәрен тиҙерәк тамамлау, уларҙы хәстәрле тәрбиәләүҙе ойоштороу менән бер үк ваҡытта, силос һалыуға һәм бесән сабыуға ла әҙерлекте киң йәйелдерергә тейештәр. Бөтә бесән сапҡыс машиналарҙы, инвентарҙарҙы үҙ ваҡытында яҡшы сифатлы итеп ремонтлау, силос һалыу өсөн алдан етерлек соҡорҙар әҙерләп ҡуйыу был эштең уңышлы үтәлеүен хәл итәсәк.

Һәр бер колхозда һәм совхозда малсылыҡтың тиҙ үҫеүен һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреүҙе тәьмин итеү өсөн ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу—ВКП(б) райкомдарының һәм район Советы исполкомдарының беренсе нәүбәттәге бурысы ул.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында

Комбайндарҙы һәм башҡа урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙың барышы тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы, республиканың колхоздарында, МТС-тарында һәм совхоздарында комбайндарҙы, бесән сапҡыстарҙы, молотилкаларҙы һәм башҡа урожай һәм бесән сабып-йыйнау машиналарын ремонтлауҙың барышын ҡарап, был эштең сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәҫлек тороуын билдәләне.

Республика Ауыл хужалығы министерствоһы, совхоздар трестары, күпселек район Советы исполкомдары председателдәре һәм МТС һәм совхоз директорҙары комбайндарҙы, бесән һәм урожай йыйнау машиналарын ремонтлау буйынса билдәләнгән планды үтәүҙә кәрәкле сараларҙы күрмәйҙәр, шуның менән үткән йылдарҙағы хаталарҙы ҡабатлайҙар. МТС-тарҙа һәм совхоздарҙа комбайндарҙы ремонтлау темпы бик түбән. Һуңғы отчетҡа ҡарағанда, 63 МТС бер генә комбайнды ла ремонттан сығармаған һәм 15 МТС тик берәр комбайн ғына ремонтлаған.

Комбайндар һәм башҡа урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙы бигерәк тә түбәндәге МТС-тар өҙәләр: Архангель МТС-ы (директоры иптәш Акчурин), Ташлыкүл МТС-ы (директоры иптәш Пашкин), Бурлы МТС-ы (директоры иптәш Мишин), Ергән МТС-ы (директоры иптәш Зюляркин), Стәрлетамаҡ МТС-ы (директоры иптәш Ромов), Благовар МТС-ы (директоры иптәш Фәйрузов), Ҡорос МТС-ы (директоры иптәш Еникеев), Йәрмәкәй МТС-ы (директоры иптәш Гордиенко), Шишмә МТС-ы (директоры иптәш Тиведев), Шаран МТС-ы (директоры иптәш Карманов), Орлов МТС-ы (директоры иптәш Мөниров), Дүртөйлө МТС-ы (директоры иптәш Ишбулатов), Иглин МТС-ы (директоры иптәш Слепенчук), Краснохолм МТС-ы (директоры иптәш Биндюгов), Кушнаренко МТС-ы (директоры иптәш Рейм), Мишкә МТС-ы (директоры иптәш Маринин), Дмитриевка МТС-ы (директоры иптәш Шестаков), Үрмиәҙ МТС-ы (директоры иптәш Мөхәррәмов), Балтач МТС-ы (директоры иптәш Ғафуров), Байҡы МТС-ы (директоры иптәш Ишкилдиев), Дыуан МТС-ы (директоры иптәш Долгополов), Тәтешле МТС-ы (директоры иптәш Солтанов), Әбйәлил МТС-ы (директоры иптәш Чехонин), Әлмөхәмәт МТС-ы (директоры иптәш Ғәлләмов), Абзан МТС-ы (директоры иптәш Сабиров), Һарыҡул МТС-ы (директоры иптәш Усманов), Һаҡмар МТС-ы (директоры иптәш Попов).

Юғарыла күрһәтелгән МТС-тарҙың директорҙары һәм был райондарҙың район Советы исполкомдары председателдәре урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙа килеп тыуған хәлдән үҙҙәренә тейешле һығымталарҙы яһаманылар, комбайндар ремонтлауға бөтә комбайнерҙарҙы һәм уларҙың ярҙамсыларын, баҫыу эштәрендә ҡатнашмаусы тракторсыларҙы ылыҡтырманылар һәм һәр бер МТС буйынса ремонт эштәренә көндәлек контроль булдырманылар.

Бесән сапҡыстарҙы, бесән йыйғыстарҙы һәм силос турағыстарҙы ремонтлау барышы бөтөнләй ҡәнәғәтләнмәҫлек тора. МТС-тарҙа бесән сапҡыстарҙы ремонтлау планының үтәлеше 10 процент кенә тәшкил итә. Уларҙы ремонтлауға тик 5 МТС ҡына башлаған.

Күп кенә МТС-тарҙың директорҙары колхоздар менән төҙөшкән договор буйынса мал аҙығы туплау эшен үтәүгә серьез ҡарамайҙар. Улар бесән сабыу, силос һалыу, болондарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу пландарын үтәүҙә йыл һайын өҙәләр, бесән йыйнау машиналарын үҙ ваҡытында ремонтлау өсөн кәрәкле сараларҙы күрмәйҙәр.

Шулай уҡ молотилкаларҙы, урғыстарҙы, силос турағыстарҙы, иген таҙартыу машиналарын һәм башҡа урожай йыйнау инвентарҙарын ремонтлау эше лә тейешенсә йәйелдерелмәй. 1951 йылдың 1 майына республика МТС-тарында 78 молотилка ремонттан сығарылған (был, пландың 6,5 процентын тәшкил итә), урғыстар ремонтлау планы 23 процентҡа, иген таҙартыу машиналарын ремонтлау— 8,5 процентҡа үтәлгән. Колхоздарҙа молотилкаларҙы ремонтлау планы 48 һәм урғыстарҙы ремонтлау планы 32 процентҡа үтәлгән. Асҡын, Салауат, Ғафури, Маҡар, Баймаҡ, Матрай, Учалы һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың колхоздары бесән һәм урожай йыйнау машиналарының береһен дә ремонтламағандар.

Республика совхоздарында ла комбайндарҙы, урожай һәм бесән йыйнаусы башҡа машиналарҙы ремонтлау ҡәнәғәтләнерлек ойошторолмаған. Бөртөклө ашлыҡ совхоздарында комбайндарҙы ремонтлау планы 22, бесән сапҡыстар — 28 процентҡа, малсылыҡ совхоздарында комбайндарҙы ремонтлау планы 33 һәм бесән сапҡыстарҙы ремонтлау — 49 процентҡа үтәлгән. Ҡаҙанғол, Раевка, Смычка, Аҡъяр, Белянковка, Аллағуз, Һаҡмар, Байрамғол, Һарығамыш совхоздары 1951 йылдың 10 майына бер генә комбайнды ла ремонтламаныл ар. Совхоздар трестарының директорҙары (Ғилуанов һәм Фоломеев иптәштәр) комбайндарҙы һәм башҡа урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙы тиҙләтеү өсөн кәрәкле сараларҙы күрмәйҙәр.

Колхоздарҙа, МТС-тарҙа һәм совхоздарҙа бесән һәм урожай йыйнауға әҙерлектә килеп тыуған тревогалы хәл, бөтәһенән элек, ремонт эшенә күпселек комбайнерҙарҙың, уларҙың ярҙамсыларының, молотилка машинистарының һәм тимерселәрҙең ылыҡтырылмауынан килеп тыуҙы. Ремонтта ҡатнашыусы комбайнерҙарҙың һәм ремонт эшселәренең хеҙмәте ныҡлап ойошторолмаған, уларҙың эштәренә көндәлек контроль ҡуйылмаған.

Республика Ауыл хужалығы министерствоһының ремонт заводтары ҡәнәғәтләнерлек эшләмәйҙәр. Уларҙа МТС-тарҙан килтерелгән комбайн моторҙарының 60 проценты ремонтланмаған әле. Ремонт заводтарының директорҙары моторҙарҙы ремонтлау буйынса МТС-тар менән төҙөшкән договорҙы үҙ ваҡытында үтәүгә тейешле сараларҙы күрмәйҙәр.

Ауыл хужалығы министерствоһының ремонт тресы (иптәш Трапезников) ремонт заводтарында комбайндарҙы ремонтлау буйынса МТС-тарҙың заказдарын үҙ ваҡытында үтәүгә ҡырҡа саралар күрмәй. Ул шулай уҡ МТС-тарҙы һәм колхоздарҙы запас частәр менән тәьмин итмәй. Сельхозснабтың Башҡортостан конторһы (управляющийы иптәш Хромченко), Автотракторосбыт (управляющийы иптәш Рахимов) МТС-тарҙы иң кәрәкле запас частәр менән тәьмин итеү мәсьәләләрен ошо көнгә тиклем хәл итмәгәндәр.

Юғарыла күрһәтелгәндәрҙән сығып Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы республика Ауыл хужалығы министерствоһын (иптәш Нәбиуллинды), совхоздар трестарын (Ғилуанов һәм Фоломеев иптәштәрҙе), район Советы исполкомдары председателдәрен, МТС һәм совхоздар директорҙарын түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итте:

колхоздарҙа, МТС-тарҙа һәм совхоздарҙа комбайндарҙы, молотилкаларҙы, урғыстарҙы, иген таҙартҡыстарҙы, бесән сапҡыстарҙы һәм башҡаларҙы ремонтлауҙы йәйелдереү һәм уңышлы тамамлау өсөн ашығыс саралар күрергә, ремонт графигенең үтәлеүен тәьмин итергә, бының өсөн бөтә комбайнерҙарҙы, уларҙың ярҙамсыларын, баҫыу эштәрендә ҡатнашмаған тракторсыларҙы һәм ремонт эшселәрен, тимерселәрҙе ремонт эшенә ылыҡтырырға. Эштең сифатына контроль булдырырға, машиналарҙы комиссиялар тарафынан ҡабул итеүҙе ойошторорға;

ремонт эшен бригадно-узел методы буйынса ойошторорға, ремонт бригадаларын һәм эш урындарын кәрәкле инструменттар, запас частәр һәм башҡа материалдар менән тулыһынса тәьмин итергә;

комбайндарҙы ремонтлау барышында орлоҡ бушатҡыстар, һалам өйгөстәр һәм орлоҡ тотҡостар ҡулайламалары булдырырға, шулай уҡ йығылған игендәрҙе, көнбағыш, тары, күп йыллыҡ үләндәрҙе һәм башҡа культураларҙы йыйнау өсөн ҡулайламалар менән йыһазландырырға;

бөтә урожай йыйнау машиналарын кадрҙар менән тәьмин итергә. Бының өсөн МТС-тар һәм совхоздар эргәһендә уҡыуҙар ойошторорға, етерлек һанда комбайнерҙар, уларҙың ярҙамсылары һәм машинистар кадрҙарын әҙерләргә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Ауыл хужалығы министерствоһының ремонт тресына һәм ремонт заводтарына моторҙар ремонтлауҙың планын үтәү һәм сифатты тәьмин итеү буйынса яуаплы икәнлектәрен күрһәтте. Ремонт предприятиеләрҙе МТС-тарҙан килтерелгән моторҙарҙы ремонтлауҙы 1951 йылдың 15 июненән дә һуңға ҡалмай тамамларға тейештәр. Шулай уҡ улар МТС-тарҙың, колхоздарҙың урожай йыйнауға бәйләнешле заказдарын туҡтауһыҙ үтәүҙе ойошторорға бурыслылар.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ауыл хужалығы производствоһын комплекслы механизациялаштырыуҙы һәм алдынғы тәжрибәләрҙе индереүҙе тәьмин итеү маҡсаттарында МТС һәм совхоз директорҙарына түбәндәгеләрҙе эшләргә тәҡдим итте:

ҡамыл тептәрен йомшартыуҙы үткәреү өсөн урожай йыйнау агрегатында етерлек һанда дискалы луҡщильниктар әҙерләргә;

комбайн артынан һалам йыйнау һәм уны эҫкертләү өсөн тросло волокушалар булдырырға;

механик көс менән иген таҙартыу өсөн установкалар етештерергә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы район Советы исполкомдары председателдәренең, район ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәренең, МТС, ЛЭС һәм совхоз директорҙарының комбайндарҙы һәм башҡа бесән һәм урожай йыйнау машиналарын үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп ремонтлау буйынса персональ яуаплы булып тороуҙарын иҫкәртте.

Мал аҙыҡтары туплау планын үтәүҙең мөһимлеген иҫкә алып, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Ауыл хужалығы министерствоһынан һәм МТС директорҙарынан МТС-тар һәм колхоздар араһында бесән сабыу, мал аҙығы силослау һәм колхоздарҙың болонлоҡтарын һәм көтөүлектәрен яҡшыртыу буйынса төҙөлгән договорҙы һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итеүҙе талап итте. Һәм мал аҙыҡтары туплау буйынса пландарҙы үтәү өсөн МТС директорҙарының персональ яуаплы булып тороуҙарын иҫкәртте.

Мәктәптәрҙә экзамендар

Яҡшы һөҙөмтәләр көтәбеҙ

Өфө ҡалаһының 27-се урта мәктәбе бынан 13 йыл элек буш урында тиҙ әйтерлек төҙөлгәйне. Тик оло юл буйына һалынған ваҡ-ваҡ өйҙәр генә бар ине ул ваҡытта. Хәҙер мәктәпте бөйөк мәһабәт биналар әйләндереп алды инде. Был районда йәшәүселәрҙең һаны ла бик күпкә артты.

Мәктәп государствоның ҙур хәстәрлегенә менән файҙалана. Был хәстәрлеккә беҙҙең коллектив уңышлы эш менән яуап биреү өсөн көрәшә.

Бөтә мәктәп экзамендарға ҙур әҙерлек алып барҙы. Уҡыу йылының һуңғы сирегендә үтелгән материалдарҙы ҡабатлауға, уҡыусыларҙың дәрестәрҙе яҡшы үҙләштереүҙәренә өлгәшеүҙе тәьмин итеү өсөн ныҡышмалы эш алып барылды. Экзамендарға әҙерлек буйынса бүлмәләр карталар һәм схемалар менән йыһазландырылды. Унда уҡыусыларға программаның бөтә бүлектәре буйынса консультациялар биреү өсөн тәжрибәле уҡытыусылар дежурить иттеләр.

Уҡыу йылының һуңғы көнөндә 4 «А» класында ата-әсәләр йыйналып, кластың экзамендарға нисек әҙерлек менән килеүен тикшерҙеләр.

Бөтә кластарҙа ла ошондай әҙерлек эштәре үткәрелде һәм кисә, иртән сәғәт 9-ға мәктәптең яҡты кластарында тыныс һәм эшлекле обстановкала экзамендар башланды.

Экзамендарҙың тәүге көнө уҡ уҡытыу-тәрбиә эшенең уңышлы ойошторолғанлығын күрһәтә һәм мәктәп коллективы экзамендарҙы яҡшы күрһәткестәр менән үтәсәгенә ышана.

М. Ильясова,
27-се урта мәктәп уҡытыусыһы.

Ҙур ойошҡанлыҡ һәм бәрҙәмлек менән

Черниковск ҡалаһының бөтә мәктәптәрендә лә экзамендар ҙур ойошҡанлыҡ һәм бәрҙәмлек менән башланды.

Икенсе номерлы ир балалар урта мәктәбендә экзамендарҙы башлау тантаналы шарттарҙа үтте. Экзаменға индерелгән уҡыусылар бөтәһе лә мәктәпкә ваҡытында килделәр. Беренсе көндә 4-се кластарҙа рус теленән диктант яҙыу, 5-се кластарҙа арифметика, 8-се кластарҙа алгебранан, 10-сы кластарҙа рус әҙәбиәтенән сочинениелар яҙыу буйынса, экзамендар үткәрелде. Тәүге көндең һөҙөмтәләре уҡыусыларҙың белемгә эйә булыуҙа өлгәшкән уңыштарын күрһәттеләр. Мәктәптең 4-се татар класында (уҡытыусы иптәш Саяпова) экзаменға ингән 12 баланың бөтәһе лә беренсе экзамендарҙы уңышлы тапшырҙы. Был класта рус теленән диктант яҙыуҙа уҡыусы Әхтәмова «5», 8 бала «4» һәм өс бала «3» билдәһе алды.

Ике йыл буйына уҡыуҙан өлгәшеүҙәр буйынса ҡалала беренсе урынды алып килгән 18-се номерлы башланғыс мәктәп коллективы быйыл экзамендарға тағы ла ҙур уңыштар менән килде. 4-се класс уҡыусыларынан экзаменға индерелгән 202 баланың бөтәһе лә мәктәпкә байрамса кейенеп килде. Директор иптәш Афанасенко уҡыусыларҙы экзамендар башланыуы менән ҡотлап, уларға ҙур уңыштар теләне. Алты кластың бөтәһендә лә рус теленән диктант яҙыу буйынса тәүге экзамен башланды. Беренсе көндең һөҙөмтәләре ҡыуаныслы. Экзаменға ингән 202 баланың 22-һе «5», 86 бала «4», 92 уҡыусы «3» һәм иң бары ике бала насар билдәләре алдылар.

Ҡаланың мәктәптәрендә экзамендарҙың тәүге көнө бына ошолай үтте.

М. Мостафин.

Кисә, 21 майҙа башланғыс, ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәрҙә экзамендар башланды.

Һүрәттә: Өфө ҡалаһы 9-сы номерлы башҡорт урта мәктәбенең 4-се класында экзамен ваҡыты. Һулдан уңға: СССР Верховный Советы депутаты, уҡытыусы Х. Ҡорбанаева һәм уҡытыусы Р. Хәбибуллина. Уҡыусылар рус теленән диктант яҙалар.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Бораулаусыларҙың ижади хеҙмәттәшлеге

Октябрьский нефтселәре һәм бораулаусылары Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталинға яҙған хатта алған социалистик йөкләмәләрен срогынан алда үтәү һәм коммунизмдың бөйөк төҙөлөштәрен нефть продукттары менән тәьмин итеү өсөн фиҙакәр хеҙмәт итәләр. Пландан тыш бирелгән проходка һәм нефть коммунизм төҙөлөштәренә арнала.

Күренекле бораулау мастеры Ҡасим Билалдинов бригадаһы ярҙамсы эшселәр менән ижади хеҙмәттәшлектә эшләй. Слесарь-стахановсы иптәш Филимонов, хеҙмәттәшлек һөҙөмтәһендә иҙелмә биреүсе насостарҙы һәм лебедкаларҙы файҙаланыуҙың коэффициентен 93,5 процентҡа еткерҙе. Ремонт ваҡытындағы буш тороуҙар 0,93 процентҡа тиклем ҡыҫҡартылды. Был ижади хеҙмәттәшлек бригадаға рекордлы һәм юғары тиҙлектә ремонтларға мөмкинлек бирә. Бригада члендәре булған насос һәм лебедка менән ремонтһыҙ 4 скважина бораулайылар. Оборудованиеларҙың ремонт-ара хеҙмәт итеү срогы 3-4 тапҡырға оҙайтылды.

Ҡыйғы районы игенселәре сәсеүҙе тамамлайҙар

Үргә Ҡыйғы. (Телефон аша). Ҡыйғы районы колхоздарында быйыл баҫыу эштәренең тәүге көндәрендә үк колхозсыларҙың хеҙмәтен ойоштороуға ныҡ иғтибар итәләр. Ҡыйғы һәм Әбдрәзәк МТС-ы механизаторҙары сәсеү эштәрен тиҙ һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн бөтә сараларҙы күрҙеләр.

Һөҙөмтәлә район иртә культуралар сәсеү планын үтәне. Бойҙай культураһы 13 мең 500 гектар урынына 14 мең гектарға еткерелеп, һоло 8 мең 600 гектар урынына 9 мең гектарҙан артыҡ сәселде.

Хәҙер бөтә колхоздарҙа ла пар һөрөү, бесән сабыуға һәм урожай йыйнауға әҙерлек эштәре йәйелдерелде.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Баҫыуҙа агитацион-массовый эште беҙ нисек ойошторҙоҡ

Беҙҙең колхоз партия ойошмаһы яҙғы сәсеүгә бәйләнгән хужалыҡ эштәрен үҙ ваҡытында башҡарыуға етәкселек итеү менән бер рәттән, колхозсылар араһында агитацион-массовый һәм политик-тәрбиәүи эштәрҙе ойоштороу менән дә систематик шөғөлләнде һәм шөғөлләнә. Төп иғтибар политик эштең идея кимәлен күтәреүгә, уның маҡсатҡа ярашлы булыуына йүнәлтелде.

Колхозсы массаларҙы тәрбиәләүҙе беҙ планлы алып барабыҙ. Беҙ һәр айға политик-тәрбиә эше алып барыу буйынса конкрет план төҙөйбөҙ. Гәзиттә, уңда һәр бер коммунисте партия поручениеларе менән солғап алыу күҙ уңында тотола һәм был план партия ойошмаһының даими йыйылышында раҫлана.

Яҙғы сәсеү осоронда үткәреләсәк политик-массовый эштәрҙең планы партия ойошмаһында айырыуса ентекле әҙерләнде. Уны төҙөгәндә беҙ үткән йылдарҙағы тәжрибәне лә күҙ уңында тоттоҡ. Бер генә колхозсыны ла, механизаторҙы ла партия йоғонтоһонан ситтә ҡалдырмау беҙҙең массовый эштең нигеҙен тәшкил итә. Был маҡсатта агитацион эшкә ауылдағы бөтә интеллигенция йәлеп ителде. Уның күпселеге үҙҙәренә йөкмәтелгән эште намыҫ менән үтәйҙәр. Миҫалға агитатор иптәш Н. Ғөбәйҙуллинде алырға мөмкин. Ул көн һайын урожайҙың яҙмышы хәл ителә торған участкала булды. Уның ялҡынлы һәр һүҙе колхозсыларҙы намыҫлы хеҙмәткә рухландырҙы. Ул М. Хоҙайбирҙина, Р. Йосопова, Ғ. Сәлиҡов һәм улар кеүек башҡа бик күп колхозсыларҙы маҡтап, уларҙың эш алымдарын киң пропагандалау менән бергә, колхоз эшенә һалҡын ҡараусы айырым колхозсыларҙы ҡаты тәнҡитләй. Баҫыу эштәренең тәүге көндәрендә ике бер туған Сәҙиҡовалар үҙҙәрендә яуаплылыҡ һиҙмәй инеләр. Агитатор улар менән бер нисә тапҡыр осрашып беседа үткәрҙе. Оҙаҡламай был колхозсыларҙың ҡылығы үҙгәреүҙең бөтә беше күрә башланы. Улар көндәлек нормаларын арттырып үтәй башлауға өлгәшкәс, иптәш Ғөбәйҙуллин Сәҙиҡоваларҙың тәүге уңыштары тураһында боевой листокта хәбәр урынлаштырҙы.

Беҙҙең колхозды хеҙмәтләндереүсе Подгорный МТС-ы быйыл ауыл хужалығы эштәренең 90 процентын башҡарасаҡ. Ошоноң өсөн механизаторҙар араһында тәрбиә эштәрен ойоштороуға беҙ айырыуса ҙур иғтибар бирҙек. Ул участкаға коммунистарҙан Азанғолов (правление председателе) һәм Шахмаев иптәштәр (трактор саскесендә эшләүсе) яуаплы итеп билдәләнделәр. Партия поручениеһен үтәүҙә иптәштәр үҙҙәрен яҡшы яҡтан күрһәттеләр. Даими рәүештә механизаторҙар эргәһендә булыу уларға политик һәм хужалыҡ темаларға киң һайын беседа үткәреп барыуға мөмкинлек бирҙе. Иртә культуралар сәсеү осоронда агитаторҙар И. В. Сталиндең «Правда» хәбәрсеһе менән булған беседаһы, СССР Верховный Советы сессияһында ҡабул ителгән Закондар, ваҡлап һатыу тауарҙарының хаҡын арзанайтыу тураһында һәм башҡа күп темаларға беседалар уҙғарҙылар. Ошо уҡ ваҡытта йәнле агитация һәм стена газетаһы эшә ауыл хужалығы алдынғыларының эш тәжрибәһе популярлаштырылды.

Партия ойошмаһының ошондай хәстәрлеге колхозсыларҙың һәм механизаторҙарҙың юғары етештереүсәнлеклә эшләүҙәрен тәьмин итте. Баҫыуҙа эшләүсе бөтә колхозсылар ҙа һәм тракторсылар ҙа тип әйтерлек көндәлек заданиеларен арттырып үтәп килделәр. Хеҙмәт дисциплинаһы яҡшы. Былар бөтәһе лә беҙҙең колхозда сәсеүҙе районда беренсе булып тамамлау мөмкинлеген тәьмин итте. ВКП(б) район комитетының һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы беҙҙең колхозға бирелде һәм беҙ уны үҙебеҙҙә һаҡлау өсөн көрәшәбеҙ.

З. Яппаров,

Помағужа районы Хоҙайбирҙин исемендәге колхоз партия ойошмаһы секретары.

Райком һәм партияның тәүге ойошмалары

Шаран районы партия ойошмаһының һуңғы конференцияһында делегаттар райкомды партияның тәүге ойошмаларына етәкселек эшен тейешле кимәлдә алып бармағаны өсөн тәнҡитләнеләр. ВКП(б)-ның Өлкә Комитеты бюроһы ла беҙҙең районда яҙғы сәсеүҙең тәүге көндәрендә ҙур етеш- [illegible]

[illegible]

итеүгә айырыуса ҙур әһәмиәт бирә. Партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлегенең эш планы буйынса райкомдың инструкторҙары ай һайын 5-6 партия ойошмаһында булалар. Улар партия ойошмаларының секретарҙарына партия-ойоштороу, партия-политик эште яҡшыр- [illegible]

[illegible]

Ф. Гилметдинов,

ВКП(б)-ның Шаран райкомы партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бүлеге мөдире.

Агитацион эш алып барылмаған урында

[illegible]

Ф. Әхмәрова.

„Кызыл Башкортостан" материалдары буйынса

„Связь работниктәре подписчиктарҙың теләктәре менән иҫәпләшмәйҙәр"

[illegible]

Туймазы һәм Баулы нефтселәренең социалистик ярышы

Бөйөк Сталин хөрмәтенә

Асфальтланған матур, таҡыр, тура юл буйлап йөҙәрләгән машиналар үтә. Ҡала урамының тротуарҙары халыҡ менән тулы.

Ҡала халҡы был көндәрҙә ғәҙәттәгегә ҡарағанда иртәрәк уяна. Һәр кемдә яңы дәрт, еңеү тойғоһо. Октябрьский нефтселәре һөйөклө юлбашсы бөйөк Сталингә яҙған хатта үҙҙәренең өҫтәренә алған социалистик йөкләмәләрен, даһиға биргән вәғәҙәләрен намыҫлы үтәү теләге менән тулылар.

Көндәр ҡояшлы, йылы. Яҙҙың тәбиғи матурлығы ла нефтселәрҙе яңы подвигтарға саҡырған кеүек тойола. Эш һөйәүсән нефтселәр яҡты сырайлы, күтәренке күңелле, дәртле, тулы энергиялы, тыныс төҙөлөш фронтының батырҙары.

Йәш ҡала күптән түгел үҙенең биш йыллыҡ юбилейен уҙғарҙы. Октябрьский — ул республикабыҙҙа иң йәш ҡалаларҙың береһе. Шулай булһа ла уның социалистик Тыуған ил алдында күрһәткән хеҙмәттәре баһа биреп бөтөрмәҫлек ҙур. Октябрьский нефтселәре үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәре, намыҫлы эштәре менән ғорурланырға хоҡуҡлылар. Шуға күрә лә тыныс төҙөлөш фронтында хеҙмәт подвигтары күрһәткән Октябрьский нефтселәре юлбашсыбыҙ, учителебеҙ ҡәҙерле Сталингә хат менән мөрәжәғәт итеү хоҡуғына эйә булдылар.

Ленин орденлы «Туймазынефть» тресының һәм ҡаладағы башҡа предприятиеларҙың эшселәрендә, инженерҙарында, техниктарында, мастерҙарында, хеҙмәткәрҙәрендә бөтәһендә лә бер теләк — даһиға биргән вәғәҙәне еренә еткереп үтәү теләге. Улар алға ҡуйылған маҡсатты, алынған йөкләмәне уңышлы үтәйҙәр. Бөйөк Сталингә яҙған хатта алынған социалистик йөкләмә срогынан алда үтәлә бара.

Үнарлаған предприятиелар производство программаһын үтәү өсөн көрәштә графиктан күп алда баралар, ритмлы эшләйҙәр, башҡарылған эштең һәйы ла, сифаты ла талаптарға яуап бирерлек. Уларҙың техник-экономик күрһәткестәре юғары, ярышып эшләү ыңғай һөҙөмтәләр килтерҙе. Беренсе, өсөнсө номерлы нефть промыслалары, Серафимовка нефть промыслаһы, икенсе номерлы төҙөлөш управлениеһы, «Туймазынефть» тресының автотранспорт контораһы, төҙөлөш-монтаж контораһы коллективтары һәм башҡа предприятиелар Май алды социалистик ярышында еңеүсе тип билдәләнделәр.

Беренсе номерлы контора бораулаусылары Май байрамына производство бүләктәре менән килделәр. Улар скважиналарҙы проходкалау буйынса алған күтәренке йөкләмәләрен арттырып үтәүҙе тәьмин иттеләр. Мастерҙар Солдатов, Сидоренко иптәштәр етәкселек иткән алдынғы бригадалар үҙҙәренең тәүлек заданиеларен систематик арттырып үтәп киләләр. Коммунист иптәш Сергей Сидоренко етәкселек иткән бораулау бригадаһы социалистик ярышта трест буйынса беренселекте алды. Был бригада 19 көн эсендә 569 метр бораулауға өлгәште һәм 137-се номерлы скважинаны бораулауҙы рекордлы ҡыҫҡа срокта тамамланы. Был күрһәткес 1951 йылда бөтә трест буйынса иң яҡшы эш өлгөһө булып тора.

«Туймазынефть» тресының транспортсылары Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталингә яҙған хатта йыллыҡ йөк ташыу планын срогынан алда үтәү йөкләмәһен алғайнылар. Уларҙың һүҙе эштән айырылмай. Социалистик төҙөлөштәргә йөк ташыу планы айҙан-айға, декаданан-декадаға арттырылып үтәлә. Автомашиналарҙы файҙаланыу коэффициенты күтәрелгәндән-күтәрелә бара.

Йәштәр араһында алдынғылыҡ өсөн көрәш массовый төҫ алды. Ныҡышмалы көрәш ыңғай һөҙөмтәләр килтерҙе. «Башзападнефтеразведка» тресының геологияэҙләнеү контораһының механик мастерскойында иптәш Ткачев етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы токарҙәре еңеүселәр итеп танылдылар. Мөтәмәтгәрәев, Ғимазов, Степаненко иптәштәрҙең ғәҙел хеҙмәттәре башҡаларға өлгө булырлыҡ.

Икенсе номерлы бораулау контораһының мастеры иптәш Ҡасим Белялдинов үҙған йылда Башҡортостан нефтселәренең иптәш Сталингә яҙған хатына ҡул ҡуйғанда күтәренке йөкләмә алғайны. Ул даһиға биргән вәғәҙәһен еренә еткереп, юғары күрһәткестәр менән башҡарҙы. Иптәш Белялдинов былтыр бораулау тиҙлеген уртаса станок-айға 900 метрға еткерҙе, икенсе төрлө әйткәндә планды 200 процентҡа үтәне. Быйыл иптәш Сталингә яҙған хатҡа ҡул ҡуйғанда иптәш Белялдинов бригадаһы тағы ла күтәренке социалистик йөкләмә алды.

— Беҙҙең бригада члендәре, — ти иптәш Белялдинов,—бөйөк Сталингә биргән вәғәҙәне уңышлы башҡарып килә. Беҙ быйыл йыллыҡ проходканы һигеҙ мең метрға үтәргә, уртаса бораулау тиҙлеген станок-айға 1200 метрға еткереп үтәргә һүҙ бирҙек. Был вәғәҙә намыҫ менән үтәлер, еңеү байрағы быйыл да беҙҙең ҡулда булыр.

Иптәш Кривошеев етәкселек иткән беренсе номерлы промысла коллективы социалистик Тыуған илгә, коммунистар партияһына иҫәпһеҙ-сикһеҙ бирелгәнлеген практик эш менән күрһәтте. Контора коллективы валовой нефть сығарыуҙы 50 процентҡа арттырҙы, хеҙмәт етештереүсәнлеген 40 процентҡа күтәрҙе, илебеҙгә пландан тыш күп миллионлаған һум файҙа бирҙе. Был промысла Бөтә Союз социалистик ярышта өс тапҡыр инде беренсе урынды алды һәм уға СССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды.

Промысла коллективы Баулы нефтселәре менән ярыша. Алдынғылыҡты бирмәү өсөн көрәш дауам итә. Промысла рентабелле, ритмлы эшләй, графиктан алда бара. Нефть сығарыусы мастер Мөхәмәтшин, Терлавцева иптәштәрҙең бригадалары норманы систематик арттырып үтәйҙәр. Стахановсыларҙан Бакиров, Тимеров, Бикбаев, Букин, Корнилов иптәштәр промыслала эш өлгөләре күрһәтәләр.

Октябрьский нефтселәренең социалистик Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәтен тағы ла күтәреүҙә өлөштәре ҙур, әлбиттә. Ләкин улар өлгәшелгән уңыштар менән генә тынысланмайҙар. Нефтселәр иптәш Сталингә яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе үҙ ваҡытында, юғары сифатлы итеп үтәү өсөн ҡайнар дәрт, ҙур ойошҡанлыҡ менән хеҙмәт итәләр. Ярышып эшләү көндән-көн яңы еңеү килтерә.

Ғәзел Үлмәсов.

Октябрьский ҡалаһы.

Октябрьский нефтселәре иптәш Сталингә биргән вәғәҙәне һәм үҙҙәренең социалистик йөкләмәләрен срогынан алда уңышлы үтәү өсөн үҙ квалификацияларын артабан күтәреү өҫтөндә эшләйҙәр.

Һүрәттә: «Туймазыбурнефть» тресының 1-се номерлы бораулау контораһының ҡатмарлы эштәр буйынса мастеры иптәш В. Н. Салов (һулдан бишенсе) мастерҙар һәм бораулаусылар менән техник занятие үткәрә.

Л. Якубов фотоһы.

Тағы ла бер тапҡыр хужалыҡ иҫәбе тураһында

Рентабелле эшләү һәм накопление туплау өсөн хужалыҡ иҫәбе мөһим шарт булып тора. Хужалыҡ иҫәбендә эшләү производство планын үтәүҙә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә, яңы техниканы үҙләштереүҙә, оборудованиеларҙы, механизмдарҙы рациональ файҙаланыуҙа, материалдарға экономия яһауҙа, производство культураһын булдырыуҙа ҙур роль уйнай, хеҙмәтсәндәрҙең материаль-тормош шарттарын артабан күтәрә.

Төҙөлөш ойошмаларының хужалыҡ эшмәкәрлегендә сифат күрһәткестәрен аҡшыртыуҙың иң мөһиме булып, төҙөү эштәренең үҙенә ташыу хаҡын кәметеү тора. Ә уға тик хужалыҡ иҫәбендә эшләүҙе тормошҡа ашырыу юлы менән генә өлгәшергә мөмкин.

«Башнефтестрой» тресының төҙөлөш управлениелары һәм ярҙамсы предприятие контоpалары хужалыҡ иҫәбендә эшләйҙәр. Улар план буйынса бирелгән заданиеларҙы үтәү өсөн көрәшәләр. Ләкин тәжрибә хужалыҡ иҫәбендә эшләүҙең управлениеларҙа һәм контораларҙа ғына түгел, ә төҙөлештә эшләүсе түбәнге бөтә звенолар өсөн дә кәрәклеген күрһәтте.

Өсөнсө номерлы төҙөлөш управлениеһының штукатурсылар бригадаһы бригадиры иптәш Долгих, үткән йылда Корабельникова һәм Кузнецов иптәштәр өлгөһөндә, төҙөү материалдарына экономия яһау өсөн көрәште ойоштороуҙа инициатор булды. Ул бик күп материалдарға экономия яһаны. Быға ул хужалыҡ иҫәбендә эшләүгә күсеү юлы менән өлгәште. Төҙөү материалдарын һаҡлыҡ менән тотоноу һөҙөмтәһендә, уның бригадаһы бер ай эсендә генә 6 тонна алебастрға, бер тонна ярым эзбизгә, 10 кубометр ҡомға, 20 килограмм ҡаҙаҡҡа һәм 7 мең даналанған артыҡ тракҫаға экономия яһаны.

Күп тә үтмәне штукатурсы Вежнина, маляр Копейкина һәм башҡа иптәштәрҙең бригадалары хужалыҡ иҫәбендә эшләй башланылар. Был ҡиммәтле башланғысҡа тресттың башҡа управлениеларының һәм контораларының да күп кенә бригадалары ҡушылды. Бөтәһе 39 бригада хужалыҡ иҫәбендә эшләй башланы. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә улар 80 мең һумлыҡ төҙөү материалдарына экономия яһанылар.

Хужалыҡ иҫәбендә эшләү бригадаларҙа хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә ярҙам итте. Мәҫәлән, беренсе номерлы төҙөлөш-монтаж управлениеһының ташсы иптәш Чуркин бригадаһы, бер ай эсендә шлакоблоктарҙы ватылыуҙан һаҡлау һәм производство отходтарын файҙаланыу иҫәбендә 200 дана шлакоблокҡа экономия яһап, производство планын 248 процентҡа үтәне. Иптәш Рыбаков етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы, бер мең 413 һумлыҡ торбаға экономия яһап, 154 процент үтәлеш бирҙе. Балта оҫтаһы иптәш Чегодаев бригадаһы 8 килограмм ҡаҙаҡҡа һәм 2,5 кубометр ағасҡа экономия яһаны. Уның план үтәлеше 153 процент тәшкил итте. Бындай миҫалдарҙы трестта күп килтерергә мөмкин. Шуны ғына әйтеү ҙә етә, хужалыҡ иҫәбендә эшләүсе 22 бригаданан 7 бригада үткән айҙа производство планын 120 проценттан алып 150 процентҡа, 10 бригада 150 проценттан алып 200 процентҡа һәм 5 бригада 200 проценттан да арттырып үтәне. Хужалыҡ иҫәбендә эшләүсе бригадалар, эш сифатын үҙ-ара тикшереүҙе тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә, эш сифатын байтаҡ яҡшырттылар.

Ләкин тресттың управлениеларында һәм контораларында хужалыҡ иҫәбендә эшләү әле тейешле кимәлдә йәйелдерелмәгән. Был эштә бик күп ҙур етешһеҙлектәр бар. Иптәш Долгих бригадаһының ҡиммәтле инициативаһын трест етәкселәре башта бик тиҙ күтәреп алдылар. Бригадаларҙы хужалыҡ иҫәбендә эшләүгә күсереү мәсьәләһе бик күп тапҡырҙар кәңәшмәләрҙә, ултырыштарҙа, актив йыйылыштарында тикшерелде. Ҡарарҙар һәм йөкләмәләр ҡабул ителде. Ләкин уларҙың бөтәһе лә ҡағыҙҙа тороп ҡалдылар. Трестта хужалыҡ иҫәбендә эшләүсе бригадаларҙың һаны артыу урынына, киреһенсә, ул айҙан-айға кәмей бара. Хатта был ижади инициативаның башланғысы — 3-сө номерлы төҙөлөш управлениеһында ла бригадаларҙы хужалыҡ иҫәбендә эшләүгә күсереү насар ойошторолған. Управлениела иң бары 3-4 бригада ғына хужалыҡ иҫәбендә эшләй. Контора һәм управлениеларҙың етәксе работниктәре ваҡ звеноларҙы хужалыҡ иҫәбендә эшләүгә күсереүгә әһәмиәт бирмәйҙәр, төп бурысты әле аңлап еткермәйҙәр. Уларҙың ҡайһы берҙәре, хужалыҡ иҫәбендә эшләү материалдарға экономия яһау өсөн генә кәрәк, тип уйлайҙар. Юғарыла әйтелгәнсә, хеҙмәткә дөрөҫ ойоштороуҙа, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә, продукцияның сифатын яҡшыртыуҙа һәм механизмдарҙы рациональ файҙаланыуҙа хужалыҡ иҫәбенең ниндәй ҙур бурыс үтәгәнен баһаламай[illegible] Хужалыҡ иҫәбенә эшләүҙең һөҙөмтә[illegible] билдәләгән ваҡытта был күрһәткес[illegible] бөтәһенә лә иғтибар ителергә тейеш.

Трестта хужалыҡ иҫәбендә эшләүсе [illegible] ноларҙың эшен учетҡа ала торған [illegible] малар был талаптарға яуап бирерлек [illegible] гел. Учет формаларының әлегә [illegible] эшләп килгән төрө, нигеҙҙә, төҙөү [illegible] риалдарының хәрәкәт итеүен [illegible] алыуҙы ғына тәьмин итә. Мәҫәлән, [illegible] борный лимит кенәгәләрендә күрһ[illegible] тәрҙең башҡа төрҙәре сағылдырыл[illegible]. Шулай уҡ төҙөлөштөң урта звенолар[illegible] төҙөлөш һәм прораб участкаларын[illegible] тарҙы, мастерскойҙарҙы хужалыҡ [illegible] күсереү буйынса ла бик аҙ эшл[illegible]. Мәҫәлән, ярҙамсы предприятиелар: [illegible] блок һәм бетон заводтары, столя[illegible] механика мастерскойҙары; автотра[illegible] контораһында: авторемонт мастерс[illegible] тимерлек һәм мотор цехтары, төҙөлө[illegible] равлениеларында төҙөлөш участкалар[illegible] булһа хужалыҡ иҫәбенә эшләүгә [illegible] релмәгәндәр.

1951 йылда «Башнефтестрой» [illegible] коллективы алдында нефть эшкәрт[illegible] өсөн төрлөктәр төҙөү планын үт[illegible] төҙөлөш эштәренең үҙенә тәшер [illegible] кәметеү буйынса ҙур бурыстар тор[illegible] ҙәүсәләр рентабелле эшләү өсөн [illegible] гә тейешләр. Бөтә ваҡ звеноларҙы [illegible] лыҡ иҫәбенә эшләүҙе ойоштороу [illegible] еңеүҙәр өсөн ҙур ярҙам итәсәк. Бы[illegible] ҡала тресттың бик ҙур файҙаланыл[illegible] резервтары бар. Төҙөлөш предприят[illegible] нең урта һәм түбәнге звеноларын [illegible] лыҡ иҫәбенә күсереү булған ресу[illegible] тағы ла киңерәк һәм тулыраҡ файҙа[illegible] ныуҙы тәьмин итер.

Ш. Мост[illegible]

«Башнефтестрой» тресы инж[illegible]

Йәш рационализаторҙа[illegible]

Рационализаторлыҡ тәҡдимдәрен [illegible] реү — производствола хеҙмәт етеш[illegible] сәнлеген артабан күтәреүҙең төп юл[illegible] ның береһе ул. Шуға күрә лә был [illegible] иың ҡатламдағы эшселәрҙе йәлеп [illegible] ҙур әһәмиәткә эйә.

Беҙ, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 4-сө [illegible] мерлы һөнәрселек училищеһы мас[illegible] һәм тәрбиәләүселәре уҡыусыларҙ[illegible] ционализацияға эшенә ылыҡтырыу б[illegible] сә ҙур эш башҡарабыҙ. Мин уҡыт[illegible] слесарҙар-йыйыусылар төркөмөн[illegible] булдап эшләйем. Хәҙер был төркөм[illegible] уҡыусы-рационализатор бар. Ул[illegible] күбеһе икешәр һәм өсәр рационализ[illegible] лыҡ тәҡдим индерҙе.

Үҙ уҡыусыларымды рационализато[illegible] һәм уйлап табыусанлыҡ эше[illegible] ҙыҡһындырыу өсөн мин «Производ[illegible] ное обучение» һәм «Знание — [illegible] исемле журналдарҙан йәш стахан[illegible] һәм производство новаторҙарының [illegible] тәжрибәләре менән уларҙы систе[illegible] таныштырып барам. Шул уҡ ма[illegible] төрлө техник темаларға кәңәшмәләр [illegible] рыла. Һөҙөмтәлә минең төркөмдә йә[illegible] ционализаторҙар активе барлыҡҡа [illegible]. Уҡыусылар араһында техника өлк[illegible] дәге яңылыҡтар менән ҙур ҡыҙыҡһ[illegible] тыуҙы. Улар айырым деталдәрҙе э[illegible] теүҙе еңеләйтеүгә һәм тиҙләтеүгә [illegible] дерелгән үҙҙәренең тәҡдимдәрен [illegible] башланылар. Беренсе уҡыу йылын[illegible] беҙҙең төркөмдәге уҡыусылар [illegible] етештереүсәнлеген һәм деталдәрҙең [illegible] тын күтәреүсе 4 төрлө махсус ҡуй[illegible] әҙерләнеләр.

Уҡыуҙың икенсе йылында беҙҙең уҡ[illegible] сыларыбыҙ Ленин исемендәге стан[illegible] төҙөү заводына производство практик[illegible] на йөрөй башланылар. Бынан һуң ра[illegible] ционализаторлыҡ эше тағы ла киңерә[illegible] лас алды. Һөҙөмтәлә заводта иғлан ит[illegible] рационализаторҙар һәм уйлап табыусы[illegible] смотрында актив ҡатнашыусылар [illegible] булды. Беҙ төркөмдә иң яҡшы ра[illegible] лизатор исемен алыу һәм теге йәки [illegible] темаға иң яҡшы рационализаторлыҡ т[illegible] димдәр яһау өсөн конкурстар үткәрә[illegible]. Металл эшкәртеүсе яңы станокҡа [illegible] булған бер төрлө махсус ҡыҫҡыс [illegible] өсөн конкурс иғлан ителде. Бирелгән [illegible] ты тәҡдимдән уҡыусы Щербин [illegible] тәҡдиме, башҡаларҙыҡына [illegible] яҡшыраҡ булып сыҡты һәм ул произ[illegible] ствоға индерелде.

Яҡшы рационализаторҙарҙың тәжр[illegible] һен бөтә уҡыусылар араһында киң т[illegible] тыуҙа беҙ тырыштыҡ, училище гәзит[illegible] һәм радионы киң файҙаланабыҙ. Уҡы[illegible] шелә тәжрибәләр менән уртаҡлаш[illegible] буйынса техник конференциялар [illegible] үткәрелә. Бөтә уҙғарылған саралар [illegible] һөҙөмтәләр килтерҙе. Ағымдағы йылда [illegible] на мин етәкселек иткән төркөмдең уҡы[illegible] сылары рационализаторлыҡ 16 т[illegible] яһанылар. Уларҙың 12-һе хәҙер про[illegible] водствола ҡулланыла. Унан йылына [illegible] һум экономия алынасаҡ. Төркөмдә [illegible] кин, Бабиков, Щербин, Вәҙер[illegible] Колупаев иптәштәр иң актив рационализа[illegible] торҙар булып һаналалар.

Е. Азанд[illegible]

Стәрлетамаҡ ҡалаһының 4-сө [illegible] лы һөнәрселек училищеһы масте[illegible]

Пландан тыш проходк[illegible]

«Ишимбайнефть» тресының борау[illegible] сылары, социалистик ярышта өлгәш[illegible] уңыштарҙы нығытып, тағы ла яҡш[illegible] күрһәткестәр яулап алыу өсөн көрәш[illegible].

Май айының 15 көнөнә бораулаус[illegible] лар пландан тыш 1281 метр про[illegible] бирҙеләр. Социалистик ярышта бере[illegible] лекте Салдатов һәм Бухаров ипт[illegible] етәкселек иткән бораулау бригадал[illegible] тоталар.

Мастер иптәш Федосеев етәкселек итк[illegible] бригада, ауыш буровойҙа эшләп, 15 к[illegible] дә, планда күрһәтелгән 194 метр урын[illegible] на 282 метр борауланы.

Б. Мөрзағәл[illegible]

Общественный малсылыҡты һәр яҡлап үҫтерергә!

Мал аҙығы әҙерләү бригадаларының эшен яҡшыртайыҡ

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа общественный малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыллыҡ планын уңышлы тамамлау эше ныҡлы һәм тотороҡло аҙыҡ базаһы булдырыуҙы талап итә. Ныҡлы аҙыҡ базаһы — общественный малсылыҡтың артабан күтәрелешенең нигеҙе.

Республикабыҙҙың колхоздары алдында ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу буйынса бик ҙур бурыстар тора. Улар план буйынса 100 мең гектар күп йыллыҡ үлән, ғөмүмән мал аҙығы өсөн 24 мең гектар бер йыллыҡ үлән, 14 мең гектар тамыр аҙыҡтар һәм ҡарбуҙ, ҡауын сәсергә, 900 мең гектарға яҡын болонлоҡта бесән сабырға, 369 мең гектар майҙанда болонлоҡтарҙы һәм мал көтөүлектәрен яҡшыртыуҙы үткәрергә тейештәр.

Ләкин республика колхоздарында һәм совхоздарында мал аҙығы культуралары сәсеү, болонлоҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу эштәренең барышы, ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы билдәләгән үткәненсә, бөтөнләй ҡәнәғәтләнмәҫлек бара. Бишбүләк, Бәләбәй, Буздәк, Ауырғазы, Мәләүез, Федоровка һәм башҡа райондарҙың колхоздары мал аҙығы культуралары сәсеүҙе һуҙалар. Дүртөйлө, Илеш, Мәләүез, Борай, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Саҡмағош, Шишмә, Өфө, Иглин, Архангель һәм Яңауыл райондарының колхоздары болонлоҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу саралары үткәреү эшенә бик һүлпән тотондолар һәм иң яҡшы срокттарҙы файҙаланманылар.

Райондарҙың, МТС-тарҙың һәм колхоздарҙың етәкселәре мал аҙығы базаһы ойоштороу эшенә үҙҙәренең ҡараштарын тамырынан үҙгәртергә, сәсеү планын үтәүгә, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә һәм мал аҙығы культураларының урожайлылығын күтәреү мәсьәләләренә яуапһыҙ ҡараштарын бөтөрөргә тейештәр.

Партия һәм хөкүмәт тәҡдим иткәненсә, күп кенә өлкәләрҙәге алдынғы колхоздарҙа мал аҙығы әҙерләү бригадаларының эше менән общественный малдар өсөн ныҡлы һәм тотороҡло аҙыҡ базаһы булдырыу практикаһы бик ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Мал аҙығы әҙерләү буйынса даими бригадалар ойоштороу мал аҙығы етештереүҙә әһәмиәтһеҙлекте бөтөрөү өсөн төп шарт булып тора. Бындай бригадалар ойошторолған колхоздарҙа мал аҙығы базаһы ныҡлы, общественный малсылыҡ ныҡлы нигеҙҙә үҫә башланы.

Мал аҙығы әҙерләү бригадаларының төп бурысы хужалыҡтың мал аҙығы запасын арттырыуҙан, әҙерләнгән аҙыҡтың сифатын яҡшыртыуҙан, был аҙыҡтарҙы һаҡлауҙы һәм йыл әйләнәһенә расходлауҙы дөрөҫ ойоштороуҙан тора.

Мал аҙығы әҙерләүсе бригада даими колхозсылар составынан торорға һәм уға ер, ауыл хужалығы машиналары, инвентарь, йәнле тартыу көстәре беркетелергә тейеш. Шул уҡ бригадаға ферма яны һәм көтөүлек-болонлоҡ сәсеү әйләнеше, сабынлыҡ участкаһы һәм орлоҡҡа сәселгән үлән баҫыуы беркетелә.

Был яңы ойошторолған производство берәмегенә мал аҙығы культураларын үҙ ваҡытында сәсеү өсөн, уларҙы ентекле тәрбиәләү һәм урожайын йыйнап алыу өсөн көтөүлектәрҙе һәм болонлоҡтарҙы яҡшыртыу эштәрен башҡарыу өсөн, шулай уҡ бесән йыйнау, силослау һәм кәрәкле күләмдә мал аҙығы культураларын сәсеү орлоғон етештереү өсөн бөтә шарттар тыуҙырылырға тейеш.

Ҡыш көндәрендә был мал аҙығын әҙерләүсе бригада малсылыҡ фермаһына мал аҙығы ташып, ашатыу өсөн мал аҙығы әҙерләү эштәре менән шөғөлләнә, үҙенә беркетелгән участкала ҡар тота, ергә тирес сығара һәм мал аҙығы культуралары сәсеү өсөн орлоҡтарҙы әҙерләп ҡуя.

Мал аҙығы әҙерләүсе бригаданың ҙурлығы бөтә колхозда ла бер төрлө булмай, ул производство заданиеларының күләме ниндәй булыуҙан сығып ойошторола. Был бригаданың үҙенең производство планы булырға тейеш.

Мал аҙығы әҙерләүсе бригадаларҙы төҙөү колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ ағынан нығытыу өлкәһендә ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Бындай бригаданы төҙөү арҡаһында баҫыусылыҡ һәм малсылыҡ бригадалары өҫтөнән етәкселек итеү еңеләйә.

Бындай бригадаларҙы төҙөүҙә МТС-тар хәл иткес роль уйнайҙар. Улар мал аҙығы культураларын сәсеү өсөн тупраҡты әҙерләү, иропаш культураларҙың рәт араларын эшкәртеү, болонлоҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу, мал аҙығы культураларын йыйнап алыу һәм силослау эштәрен үҙ ваҡытында башҡарыу кеүек мөһим сараларҙы тормошҡа ашырыуҙа бригадаларға ҙур ярҙам күрһәтергә бурыслылар.

Д. Коврижных,

ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.

Күргәҙмәгә ҡатнашыуға кандидаттар

Республикалағы күп кенә колхоздарҙың һоҡланғыс уңыштарға өлгәшкән баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары, малсылыҡ фермалары һәм уларҙың алдынғы работниктары күргәҙмәлә ҡатнашыу хоҡуҡын алдылар.

Ҡандра районының үткән йылда 30 бейәнән 30 ҡолон алып үҫтергән һәм йылҡысылыҡ планын 122,3 процентҡа, шулай уҡ малсылыҡтың бөтә төрө буйынса планды арттырып үтәгән Калинин исемендәге колхоздың йылҡысылыҡ фермаһы һәм 11 бейәнән 11 ҡолон алып үҫтергән алдынғы ат ҡараусыһы Фәррухшин быйыл Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашасаҡ.

Күргәҙмәгә кандидаттар араһында шул уҡ райондағы «Ҡыҙыл Маяҡ» колхозының 12 бейәнән 12 ҡолон алып үҫтергән алдынғы ат ҡараусыһы Һәрисенко, Молотов исемендәге колхоздың 12 бейәнән 12 ҡолон алып үҫтергән ат ҡараусыһы Әминов иптәштәр бар.

Шулай уҡ Благовар районы «Большевик» колхозының ат ҡараусыһы иптәш Прокопенко 11 бейәнән 11 ҡолон, Туймазы районы «Балды-Тау» колхозының өлкән табунщигы Сәдиҡов үҙенә беркетелгән 40 бейәнән 36 ҡолон алып үҫтерҙе. Был иптәштәр үҙҙәренең яҡшы эш күрһәткестәре өсөн быйыл ауыл хужалығы күргәҙмәһенә кандидат булып торалар.

Шулай уҡ күргәҙмәгә кандидат итеп һайланып алынған Күмертау районы Буденный исемендәге колхоздың һөтсөлөк-тауар фермаһы. Был колхоз фермалағы 40 һауын һыйырҙың һәр береһенән уртаса алғанда 2357 литр һөт һауып алып, юғары күрһәткестәргә өлгәште.

Баймаҡ районы «Красный Октябрь» колхозының өлкән сабаны Сафиуллина үҙенә беркетелгән 100 һарыҡтан уртаса 148 бәрәс һәм бер һарыҡтан 322 грамм йөн алып, күргәҙмәлә ҡатнашыу хоҡуҡы алды.

Учалы районы «Урал» колхозының иптәш Шәһмәрҙанов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы 160 гектар майҙанға сәселгән яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 20 центнер, Бишбүләк районы Ленин исемендәге колхоздың Семенов етәкселек иткән бригадаһы яҙғы бойҙайҙың гектарынан 22 центнер урожай алып, күргәҙмәлә ҡатнашыу хоҡуҡын алдылар.

Намыҫлы хеҙмәттең данлы кешеләре иҫәбенә кандидаттар һаны көндән-көн арта бара.

Г. Бинташева.

Ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыла

Учалы. Байрамғол малсылыҡ совхозы (директоры иптәш Суворов) яҙғы культуралар сәсеүҙе уңышлы тамамланы. Совхозда бөртөклө культуралар сәсеү һәм баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыу планы тулыһынса үтәлде.

Быйыл совхозда мал аҙығы базаһы булдырыуға ныҡлы иғтибар бирелә. Мал аҙығы культуралары сәсеү планы 121 процентҡа үтәлде. Был, былтырғыға сағыштырғанда, 4 тапҡырға күберәк тигән һүҙ.

Күпселек тракторҙар хәҙер пар һөрәләр. Тракторист иптәш Федоров С—80 тракторы менән 400 гектар ер һөрҙө, 300 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Б. Кочетков.

ТӘЖРИБӘЛЕ ЙЫЛҠЫСЫ

Йылҡысылыҡ буйынса «Красный украинец» колхозы Йомағужа районында беренсе урынды алып тора. Был ауыл хужалығы артеле йылҡы малдарының һаны менән генә түгел, уларҙың нәҫелле һәм йылдам үҫеүҙәре менән дә тирә-яҡта дан тота. Йылҡысылыҡ фермаһында быйыл яҙ тағы 85 ҡолон алынды. Был уңыш үҙ-үҙенән килмәне, әлбиттә. Ул, беренсенән дә элек, йылҡысыларҙың фиҙакәр хеҙмәттәре менән яулап алынды.

Тәжрибәле йылҡысы иптәш Арбузов ун йылдан артыҡ инде йылҡы малдары тәрбиәләй. Яков Осипович тынысһыҙ кеше ул. Тәүлектең теләһә ниндәй ваҡытында ла уны аттары эргәһендә күрәһең.

Үҙенең ярҙамсыһы Михаил Устинов менән берлектә иптәш Арбузов 53 баш йылҡы малы тәрбиәләй.

Ҡолондар айырыу тәрбиә талап итәләр, — ти Яков Осипович. Һәм йылҡысы уларға ҙур иғтибар бирә. Ул һарайҙы һәр ваҡыт таҙа тота. Ҡояшлы көндәрҙә иптәш Арбузов ҡолондарҙы саф һауаға сығарып йөрөтә. Ошондай иғтибар менән эшләүе арҡаһында иптәш Арбузов тәрбиәләгән бейәләрҙең ҡолон һалғандары һәм ҡолондарҙың үлеү ваҡиғаһы булғаны юҡ. Ул 1949 йылда 10 бейәнән 10 ҡолон, былтыр 12 бейәнән 11 ҡолон һәм быйыл 17 бейәнән 17 ҡолон алыуға өлгәште. Йылҡысылыҡ үҫтереүҙәге был уңыштары өсөн ул Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә кандидат итеп раҫланды.

М. Мөхәмәдиев.

Объектив сәбәптәр ышығында

Совет кешеләре большевиктар партияһының һәм хөкүмәттең Тыуған илебеҙҙең культураһын артабан үҫтереү тураһында булған сталинсә ҡайғыртыуын еләнән-ел тоялар. Ҡала хужалығын, хеҙмәтсәндәрҙең тормош-торлаҡ шарттарын систематик яҡшыртыуҙы партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ халыҡ хужалығы бурыстарының иң мөһимдәренең береһе итеп ҡуйҙы. Бер үк ваҡытта хөкүмәт ҡалаларҙы реконструкциялау һәм пландаштырыу, төҙөкләндереү өсөн бик күп расход тота һәм төҙөлөш материалдары менән тәьмин итә.

Республикабыҙ башҡалаһы — Өфөлә төҙөлөш эштәре фронты йыл һайын киңәйә бара. Уның архитектура яғынан да, төҙөкләндереү яғынан да йөҙө үҙгәрә, урамдарында күп ҡатлы йорттар һаны арта бара. Тик үткән йылда ғына Өфө хеҙмәтсәндәре 20 миллион һумлыҡ яңы торлаҡ майҙандары алдылар. 1946 йылға ҡарағанда, был биш тапҡырҙан да артыҡ тәшкил итә, тигән һүҙ.

Өфө ҡалаһын реконструкциялау һәм төҙөкләндереү буйынса РСФСР һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советтары раҫлаған генеральный план бар. Ул ҡалалағы бөтә төҙөлөште алып барыусы һәм уның һәүбәтен, йорттарҙы нисә ҡатлы төҙөләсәген асыҡлаусы документ булып тора. Был генеральный планда ҡаланың төҙөлөшкә яраҡлы булған селитеб территорияһының төп өлөшө государство торлаҡ, социаль-культура төҙөлөшөнә бүленгән. Ә индивидуаль төҙөлөштәр өсөн унда бик аҙ территория күрһәтелгән. Улар генеральный планда Иҫке Өфө, Глумилино райондарында ғына пландаштырылғандар. Ҡалалағы капиталь төҙөлөштөң ҙур күләме һәм территорияның сикләнгән ҡалда булыуы генеральный план тарафынан ҡабул ителгән торлаҡ фонды составындағы индивидуаль-торлаҡ төҙөлөшөнөң минималь процентен тулыһынса аҡлай. Бынан, ҡаланың, нигеҙҙә капиталь төҙөлөш иҫәбенән үҫергә һәм уның үҙәк өлөшөндә 20—25 йыл эсендә тулыһынса реконструкция үткәрелергә тейешлеге күренә.

Ә ысынбарлыҡта был реаль, уйланған һәм законлы идея тормошҡа тулыһынса ашырылмай әле. Средстволарҙың етешмәүе, проектлаштырыуҙа ауырлыҡ ҡуҙғалыусанлыҡ һәм башҡа шундай төрлө «объектив сәбәптәр» арҡаһында төҙөүселәр ҙур, капиталь йорттар төҙөү эшенән ҡасалар. Ҡала ойошмалары, был мәсьәлә буйынса ныҡлы линия булдырмайынса, төҙөүселәр менән килешеп ҡарайҙар, күп ҡатлы йорттар төҙөү эше менән бер һәм ике ҡатлы йорттар төҙөү эшен алыштыралар, ҡаланың үҙәк өлөшөндә интенсив төҙөлөштәр урынына Глумилиноны йәки ҡаланың аҙ эффектлы булған башҡа райондарын төҙөлөш менән биләйҙәр.

Үткән йылда Өфө ҡалаһында государство учреждениеларына, предприятиеларына һәм ойошмаларына ҡараған 148 торлаҡ йорттары төҙөлдө. Уларҙың күп ҡатлылары — 8, өс ҡатлылары — 7, ике ҡатлылары — 65, ә ҡалған 68 йорт — бер ҡатлы итеп төҙөлдөләр. Был һандар, әлбиттә, ҡалала күберәк бер ҡатлы ғына йорттар төҙөлгәнен күрһәтәләр. Бындай метод менән эшләү ҡала төҙөлөшөн һәм уның реконструкция срогын оҙайта, ер территорияһын рациональ файҙаланыуға ҡамасаулыҡ яһай, ҡала территорияһын бер ҡатлы, экономияһыҙ булған йорттар менән биләй.

Государство әһәмиәтендәге төҙөлөштәрҙән башҡа Өфө ҡалаһында бер ҡатлы индивидуаль йорттар төҙөү ҙә үҫә бара. Үткән йылда индивидуаль төҙөлөш өсөн 357 участка бүленде. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар проект буйынса төҙөлмәйҙәр. Индивидуаль йорттарҙы ҡала тибы тураһында бер нәмә лә аңламаған балта оҫталары үҙ белдектәре буйынса төҙөйҙәр. Ҡаланың район Советтары был «төҙөүселәрҙән», законда күрһәтелгәненсә, үҙ участкаларын, тротуарҙарҙы йәшелләндереү һәм төҙөкләндереү буйынса булған бурыстарҙы үтәүҙе уларҙан талап итмәйҙәр. Шуның арҡаһында ҡаланың индивидуаль йорттар төҙөлгән айырым райондары тарҡаулыҡ, культураһыҙлыҡ һәм төҙөлөп бөтмәгән төҫ алып торалар. Быны менән улар, әлбиттә, ҡаланың дөйөм культураһына бик ҙур тәьҫир яһайҙар.

Индивидуаль торлаҡ йорттары төҙөүселәр араһында, ҙур масштабта булмаһа ла, бигерәк тә ҡала ҡырында, үҙ белдектәре менән йорт төҙөүселәр ҙә бар әле. Һыу баҫыу ваҡиғалары йыш булғанлыҡтан төҙөлөш эштәре официаль рәүештә тыйылған Кооператив поляналағы, Нижегородкала айырым район коммуналь хужалыҡтары работниктарының ғәмһеҙлеге арҡаһында һәм уларҙың государство законын боҙоусылар менән ныҡлы көрәш алып бармауҙары һөҙөмтәһендә, үҙ белдектәре менән рөхсәтһеҙ индивидуаль йорт төҙөү ваҡиғалары һаман да бөтөрөлмәгән әле. 1950 йылда Жданов районы территорияһында ғына үҙ белдектәре менән 43 йорт төҙөү ваҡиғаһы булды. Ленин районында ул 33 йорт тәшкил итте. Бындайҙар ҡаланың башҡа райондарында ла аҙ түгел. Урындағы Совет органдары быға «бармаҡ аша» ғына ҡарайҙар.

Индивидуаль йорт төҙөүселәрҙең урындағы Совет органдарынан рөхсәтһеҙ һәм проектһыҙ үҙ белдектәре менән эш итеү ваҡиғалары, һис шикһеҙ, бөтөрөлөргә тейеш. Кооператив поляна районын ақрынлап ҡына торлаҡ йорттарынан таҙартырға, уны йәшелләндерергә һәм Өфө хеҙмәтсәндәренең йәйге ял урынына әйләндерергә кәрәк.

М. Сәхәүетдинова,

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге архитектура эштәре управлениеһы начальнигы.

Ярышып эшләйҙәр

Ишембай. «Тайрук» промартеле ҡала төҙөлөштәренә йыл һайын йөҙәр меңләгән кирбес етештерә. Артелдең кирбес заводы, башҡа йылдарға ҡарағанда, быйыл эш сезонына яҡшы әҙерләнде. Кирбес һарайҙары ваҡытында ремонтланып бөттө, 500 кубометрҙан артыҡ утын килтерелде.

Апрель айы аҙағында завод кирбес һуғыу эшенә башланы. Тәүге көндәрҙән үк коллектив юғары эш күрһәткестәренә өлгәште. Айырыуса формовщик Фәтхиселамова, Юнусова, Мөхәмәтшина иптәштәр көндәлек норманы 115—120 процентҡа үтәйҙәр. Улар артабан үҙ заданиеларын 130—150 процентҡа еткереп үтәү өсөн ярышалар.

В. Даутов.

Башҡорт АССР-ы колхоздарында баҫыу эштәре барышы

(План үтәлеше, 1951 йылдың 20 майына, проценттарҙа).

Тәртип урыны	Районлар	[illegible]	[illegible]	Пар һөрөү
1	Хәйбулла	105,7	77	16
2	Әбйәлил	102	79	36
3	Баймаҡ	102	62	22
4	Матрай	100,7	51	8
5	Учалы	100,3	33	1
6	Стәрлетамаҡ	97,5	62	20
7	Зианчура	96,9	79	1
8	Буздәк	96,3	77	54
9	Белорет	95,7	30	21
10	Әбзәлил	95,3	47	4
11	Йомағужа	95	126	30
12	Ҡыйғы	94,3	46	3
13	Туймазы	92,5	107	72
14	Миәкә	92,4	74	3
15	Күгәрсен	92,4	47	19
16	Стәрлебаш	92	76	7
17	Шишмә	81,9	81	26
18	Ҡандра	91,7	86	60
19	Салауат	91,4	45	5
20	Дәүләкән	90,8	89	25
21	Балтас	90,6	64	20
22	Саҡмағош	90,2	82	17
23	Әлшәй	90,1	82	15
24	Благовар	89,9	99	20
25	Бәләбәй	89,5	98	25
26	Шаран	89,1	83	26
27	Ауырғазы	88,3	71	16
28	Ғафури	88,1	52	17
29	Ҡырмыҫҡалы	87,9	65	5
30	Маҡар	87,8	66	45
31	Йәрмәкәй	86,4	82	25
32	Воскресен	86,1	57	7
33	Федоровка	85,7	68	6
34	Илеш	85,7	58	10
35	Бакалы	85,5	108	19
36	Йылайыр	85,2	28	—
37	Дүртөйлө	85	58	43
38	Бәләбәй	84,9	59	8
39	Бишбүләк	84,8	76	1
40	Архангель	84,7	78	10
41	Мәләүез	84,7	65	6
42	Тәтешле	84,6	61	21
43	Өфө	84,2	78	34
44	Бөзәк	83,7	72	16
45	Кушнаренко	83,5	52	4
46	Борай	83,1	63	14
47	Мишкә	83,1	61	28
48	Бөрйән	83	14	—
49	Яңауыл	82,2	62	40
50	Ҡалтасы	82	70	13
51	Белоҡатай	80,6	38	11
52	Мәсетле	80,6	55	0,7
53	Иглин	80,1	75	35
54	Бүрә	80	57	44
55	Покровка	79,5	53	17
56	Дыуан	79,2	53	6
57	Краснокама	78,6	49	12
58	Иглин	76,1	62	31
59	Асҡын	73,3	72	21
60	Благовещен	72	58	50
61	Ҡариҙел	71,2	44	7
62	Бәйгәбаш	71,1	63	35
63	Оло-Төләк	62,4	64	37
64	Октябрьский ҡалаһы	76,9	165	—

Ағастарҙы тәрбиәләйҙәр

Шишмә. Мичурин исемендәге колхозда быйыл план буйынса 26 гектар майҙанда ағас ултыртыу билдәләнгәйне. Колхозда иптәш Хәкимов етәкселегендәге звено был планды арттырып үтәне.

Тракторҙарҙы техник тәрбиәләүҙең сифатын күтәрергә

Ауыл хужалығын социалистик реконструкциялауҙы тормошҡа ашырыуҙа һәм эреләтелгән колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуҙа машина-трактор станциялары хәл иткес әһәмиәткә эйә булып торалар. Беҙҙең ауыл хужалығы хәҙерге көндәге кеүек машиналарҙы һәм механизмдарҙы бер ваҡытта ла ошо тиклем күп һанда алғаны юҡ ине. Машина-трактор паркы һан яғынан ғына артмаһы, шулай уҡ уның сифаты ла яҡшырҙы, дизель яғыулығында эшләүсе көслө гусеницалы тракторҙар менән байытылды.

Күп һанда С—80, ДТ—54, КД—35 маркалы тракторҙар эшләп сығарылғанлыҡтан, уларҙы бигерәк тә экономиялы һәм эффектлы файҙаланыу өсөн механизатор кадрҙарының техник белем кимәлен күтәреү мәсьәләһе бөтә киҫкенлеге менән алға килеп баҫа.

Иптәш Сталин: «Техниканы хәрәкәткә килтереү өсөн һәм унан тулыһынса файҙаланыу өсөн, техникаға эйә булған кешеләр кәрәк, был техниканың искусствоһын бөтә ҡағиҙәләре буйынса үҙләштерергә һәм файҙаланырға булдыҡлы булған кадрҙар кәрәк. Техниканы үҙләштергән кешеләр булмағанда, техника — йәнһеҙ. Башында техникаға эйә булған кешеләр торғанда техника мөғжизәләр бирә ала һәм бирергә тейеш», тип өйрәтә. Иптәш Сталиндең был аҡыллы һүҙҙәре хәҙер айырыуса көс менән яңғырайҙар.

Беҙҙең был һүҙҙәре техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙа механизатор кадрҙарының ниндәй ҙур роль уйнағанлыҡтарын тағы ла ныҡыраҡ хәтергә төшөрә.

Машина-трактор паркын эксплуатациялауҙа төп һәм мөһим мәсьәлә булып техник шарттарҙы үтәү мәсьәләһе тора.

Эксплуатациялана торған машинаның уның конструкция үҙенсәлеге талап иткәнсә уның механизмдарына эш шарттары тыуҙырылғанда ғына тейешле техник-экономик эффектте алырға мөмкин. Ҡағиҙәләрҙә күрһәтелгән шарттарҙы боҙоу бөтә эшкә насар тәьҫир итә: механизмдар тиҙ туҙа, һына һәм хужалыҡ өсөн ҡиммәткә төшә торған тик тороуға һәм ремонт үткәреүгә килтерә.

Машиналарҙы эксплуатациялағанда уның эшләү срогын оҙонайтыу өсөн түбәндәгеләргә иғтибар итергә кәрәк. Майлау системаһын яҡшы ҡарап йөрөтөү һәм тейешенсә майлау талап ителә. Машинаның ашала торған урындарын таҙа тоторға, унда туҙан инеүҙе алдан иҫкәртергә, һауа таҙартҡыстарҙы, беркеткестәрҙе, сальниктарҙы дөрөҫ ҡарап йөрөтөргә, таҙа яғыулыҡ һәм майлау материалдары файҙаланырға, фильтрҙарҙы дөрөҫ ҡарап йөрөтөргә, фильтрлай торған элементтарҙы үҙ ваҡытында алыштырырға кәрәк. Двигателдә һыу ҡайнауына юл ҡуйырға ярамай, һыуытҡыландырыу системаһын нормаль хәлдә тоторға кәрәк. Машинаның төп узелдары систематик ҡарап, тикшереп йөрөтөлөргә, беркетә торған частар нормаль хәлдә тотолорға, бушау, ҡаҡшау кеүек хәлгә юл ҡуйылмаҫҡа тейеш.

Техник яҡтан ҡарау операцияһы план буйынса үткәрелә, сөнки алдан билдәләнгәнсә машина техник яҡтан мотлаҡ ҡаралырға тейеш. Сираттағы техник тәрбиә үткәрмәй тороп, машинала эшләү тыйыла.

Күп кенә трактор бригадаларында техник яҡтан тәрбиәләү эшенең ремонтлауға ҡарағанда техник тәрбиәләүҙе ойоштороуҙа төп етешһеҙлек булып тора. Ә был хәл баҫыу эштәре ҡыҙыу ғына барғанда күп кенә ваҡытты һәм көстө расходлауға килтерә. Был хәл ҡышҡы сезонда тракторҙарҙы насар сифатлы итеп ремонтлағанлыҡты күрһәтә.

Машиналарҙы эксплуатациялағанда яңы сығарылған С—80, ДТ—54 һәм КД—35 тракторҙарының конструкцияһының үҙенсәлеген иғтибарға алырға кәрәк. Был үҙенсәлектәр элек сығарылған коренной һәм шатунный подшипниктарҙа бар. Яңғыҙ Ҡайын МТС-ында ДТ—54 маркалы тракторҙарҙы ремонтлағанда был үҙенсәлектәрҙе иҫкә алмағандар, ә коренной һәм шатунный подшипниктарҙы элек ремонтланып килгән СТЗ—НАТИ һәм СТЗ тракторҙарыныҡы кеүек ремонтланғандар. Икенсе төрлә әйткәндә, коренной һәм шатунный подшипниктар Б—83 баббиты менән ҡалып итеп, техник шарттарҙан арттырып ҡойолған. Бынан башҡа коренной һәм шатунный подшипниктарға регулировать итеү өсөн 0,6 миллиметрҙан 1,2 миллиметрға тиклем прокладкалар ҡуйғандар.

ДТ—54 тракторында коренной һәм шатунный подшипниктарҙа вкладыштар ҡаты антифрикцион ҡурғашлы бронза иретмәһе менән ҡойолғандар, ул ғәҙәттәге ҡулланыла торған баббитҡа ҡарағанда бигерәк тә ныҡ һәм сыҙамлы була, эксплуатациялау ваҡытында май зазорын регулировать итеүҙе талап итмәй. Шуның өсөн коренной һәм шатунный подшипниктарҙа регулировать итеү прокладкаһы ҡуйылмаған.

Дизелде дөрөҫ ҡарап йөрөтөү тәьмин ителгәндә нормаль эш шарттарында кривошип — шатун механизмдары бик аҙ туҙыусан була һәм дизель кәмендә 2 мең сәғәт эшләй.

Подшипниктарҙы ремонтлағанда техник талаптарҙы боҙоу арҡаһында Яңғыҙ Ҡайын МТС-ында яҙғы сәсеү осоронда авария буйынса (шатунный подшипниктарҙың иреүе, шатун болттарының өҙөлөүе) күп кенә ДТ—54 тракторҙары тик торҙо.

Башҡа маркалағы тракторҙарҙың төҙөкһеҙлеген дә әйтеп үтергә кәрәк. СХТЗ тракторының двигателендә ҡыҫым кимәлен сиктән тыш арттырғанда уның ҡеүәте 30-32 ат көсөнән 24-25 ат көсөнә кәмей, яғыулыҡ байтаҡ артыҡ тотола. Бындай хәлдә двигателдең радиаторында һыу тиҙ ҡайнай, көслө һуғыуҙар ишетелә, оборот һаны бик ныҡ үҙгәрә. Былай булғанда цилиндр, поршендар, кольцолар, палецтар, втулкалар тиҙерәк туҙа, подшипниктарҙы йышыраҡ тартыу кәрәклеге килеп тыуа. Шундай уҡ күренештәр башҡа тракторҙарҙа ла һиҙелә.

Эштең ысын мәғәнәһен аңламай, тикшермәй тороп, ҡайһы бер механиктар был хәлдә двигателдең поршень группаһын алыштырырға ынтылалар, яңы блок баштары ҡуялар, карбюраторҙарҙы, радиаторҙарҙы, магнетоны алмаштыралар, шуларҙы башҡарғандың һуңында ла яғыулыҡты артыҡ тотоуҙан, оҙаҡ тик тороуҙан тракторҙың эшләп сығарыуы түбәнәйеүенән ҡотола алмайҙар.

Әгәр ҙә ҡыҫым дәрәжәһе кривошипнең радиусы арттырылыуға бәйләнгән булһа, ул ваҡытта шатундың эшкә яраҡлы оҙонлоғон кәметәләр йәки блок башы аҫтындағы прокладканың ҡалынлығын арттыралар.

Клапандарҙы шымартыу эше үҙ ваҡытында үткәрелмәү, стержень ҡапҡастары араһында һәм ҡайһа йәки әтәргес араһында зазорҙы арттырыу, поршень кольцоларын һәм поршендең үҙенең туҙыуын тиҙләтә, двигателдең ҡеүәтен кәметә һәм яғыулыҡты расходлауҙы арттыра.

Тейешле техник ҡағиҙәләргә һаҡламағанда двигатель артыҡ ҡыҙа. Двигателдең ҡыҙыуына һыуытҡыландырыу системаһының бысраҡланыуы, двигателдең насар майланыуы, вентилятор ҡайышының буш булыуы, ҡабыҙыу мейеһенең ғәҙәттән тыш арттырылыуы йәки бик түбән булыуы, эш смесенең күп йәки бик аҙ булыуы, двигателгә артыҡ нагрузка биреү һәм башҡалар сәбәп була. Күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе еңел бөтөрөргә мөмкин. Бының өсөн ҡабыҙыу установкаһын нормаль хәлгә килтерергә, һыуытҡыландырыу системаһын яҡшы тоторға, радиаторҙы таҙа хәлдә тоторға, йомшартылған һыу ҡулланырға кәрәк.

Дизель яғыулыҡ аппараты (насос, форсункалар, помпа, фильтрҙар һәм башҡалар) двигатель эшендә бик мөһим функцияны үтәй. ЧТЗ, С—65, С—80, ДТ—54 һәм КД—35 тракторҙары эшендә яғыулыҡ аппаратураһы, беренсе сиратта насостар һәм форсункалар кварталға бер тапҡыр контроль-регулировочный стендта һынап ҡаралырға тейеш.

Дизель яғыулығы һәм майлау материалы өсөн айырым һауыт ҡулланырға кәрәк.

Эксплуатация ваҡытында двигателгә туҙан инмәүен ныҡ күҙәтергә кәрәк. Туҙан — һуғыс системаһын бөрөтөү тығыҙ булмағанлыҡтан инә.

Һауа таҙартҡысты техник яҡтан ҡарауҙы бик ныҡ итеп һәм күрһәтелгән срокта үткәреү талап ителә. Техник ҡағиҙәләргә һаҡламағанда һауа таҙартҡыс тиҙ боҙолоусан була. Цилиндрға ингән туҙан наждаҡ кеүек хәрәкәт итә, двигателдең кольцолары, поршендәре һәм гильзалары туҙыуын дүрт-биш тапҡырға тиҙләтә, картерҙа майлауҙы, яғыулыҡты артыҡ тотоноуҙы бәрлыҡҡа килтерә, моторҙың көсөн һәм эшләп сығарыуын кәметә.

Техник ҡарау эштәрен башҡарғанда майлау системаһына ныҡлы иғтибар биреү талап ителә.

Трактор бригадаларына ярҙам итеүҙә күсмә ремонт мастерскойҙары хәл иткес роль уйнарға тейештәр. Күсмә мастерскойҙарҙың мөһим эштәре трактор бригадаларын запас частар менән һәм техник тәрбиә эшен оборот агрегаттары менән тәьмин итеүҙән тора. Оборот агрегаттары түбәндәгеләрҙән торорға тейеш: клапандары менән цилиндр баштары, карбюраторҙар, магнето, май насосы, май фильтре, яғыулыҡ насосы һәм форсункалар, вентилятор, радиатор, регулятор, сцепление муфтаһы, алыштырыу коробкаһының шестерняларе.

Тракторҙан һүтеп алынған узелдар һәм агрегаттар үҙәк мастерскойҙарға оҙатылалар һәм оборот фонды итеп ҡайтанан ремонтланырға тейештәр. Күсмә мастерскойҙар квалификациялы ремонт персоналы менән тәьмин ителергә тейеш. Был персоналда мастерской начальнигы, шул уҡ МТС-тың участка механигы, слесарь-монтажсы һәм слесарь-монтажсы сифатында файҙаланыла торған шофер булыуы шарт.

Машина-трактор паркын эксплуатациялаусы һәм хеҙмәтләндереүсе механизаторҙарҙың бурысы шунан тора, улар тракторҙарҙы һәм тағылма машиналарҙы техник төҙөк хәлдә тоторға тейештәр. Быны өсөн техник ҡағиҙәләрҙә күрһәтелгән шарттарҙы бик ныҡ ерена еткереп тормошҡа ашырыу талап ителә. Сөнки улар машина-трактор паркын юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланыуҙа төп вклад һәм иң яҡшы шарттар тыуҙыралар. Республикабыҙҙың механизаторҙары машина-трактор паркын тулы ҡеүәтендә файҙаланырға, социалистик колхоз баҫыуҙарынан юғары урожай алыуҙы тәьмин итеү өсөн бөтә көс, бөтә энергия менән эшләргә тейештәр.

С. Мальков,

БАССР Ауыл хужалығы министрствоһы ремонт тресының баш инженеры.

Өфөлә «Красная Башкирия» газетаһы призына эстафета үткәрелде.
Һүрәттә: эстафетала беренселекте алыусы «Искра» спорт йәмғиәтенең командаһы. (Һулдан уңға) А. Антипина, И. Мидякова, Н. Елхина, М. Антипина, С. Кутилех, Е. Кондюкова иптәштәр.
А. Червинский фотоһы.

ФУТБОЛ

РСФСР беренселеге өсөн

Өфө. Йәкшәмбе көн, «Динамо» стадионында майҙан хужаларының Березники ҡалаһы «Химик» командаһы менән Урал зонаһы буйынса РСФСР беренселеге өсөн осрашыуҙары булды.

Ҡунаҡтар тәүге минуттан уҡ инициативаны үҙ ҡулдарына алдылар, 16 минутта иҫәпте астылар, 2 минуттан һуң иҫәп тағы ла бергә артты. Матчтың тәүге өлөшө тамамланыуға өс минут ҡалғас, «Динамоның» ҡапҡаһында тороусы үҙ ҡапҡаһына өсөнсө тупты үткәреп ебәрҙе.

Икенсе таймда «Химик» командаһы тағы ла икенө отто. Шулай итеп уйын «Химик» командаһы файҙаһына 5:0 иҫәбе менән тамамланды.

Черниковск. 20 майҙа Черниковск ҡалаһының Гастелло исемендәге стадионында Урал зонаһы буйынса РСФСР беренселеге өсөн футбол матчы үткәрелде.

Черниковск ҡалаһы футболистәре үҙ майҙандарында Свердловск ҡалаһының «Авангард» йәмғиәте командаһын ҡабул иттеләр.

Уйындың беренсе таймында ҡунаҡтар, көслө һөжүмдәр яһап, өҫтөнлөк алырға тырыштылар. Ләкин майҙан хужалары, һәр бер атаканы ҙур оҫталыҡ менән кире ҡағып, үҙ ҡапҡаларына бер генә тупты ла үткәрмәнеләр. Беренсе таймда бер яҡ та ота алманы.

Икенсе таймдың башынан уҡ Черниковск футболистәре, көслө һөжүмгә күсеп, уйындың тәүге минутында ҡунаҡтар ҡапҡаһына беренсе тупты үткәрҙеләр һәм, ҡыҫымды артабан көсәйтә барып, матчтың аҙағында «Авангард» ҡапҡаһына мәйештән һуғып, тағы ла бер тупты индерҙеләр.

Уйын 2:0 иҫәбе менән Черниковск футболистәре файҙаһына тамамланды.

Еңел атлетика буйынса матч осрашыуы

Күптән түгел Куйбышевта еңел атлетика буйынса матч осрашыуы булып үтте. Матчта РСФСР-ҙың төрлө өлкәләренең иң яҡшы командалары ҡатнашты.

Был осрашыуҙа Башҡортостан спортсмендәре яҡшы һөҙөмтәләр күрһәттеләр.

Башҡортостан чемпионы В. Кривошеин 800 метр араны йүгереп үтеүҙә беренсе урынды (2 минут 0,7 секундта), У. Булатов икенсе урынды алды. Шул уҡ араны ҡатын-ҡыҙҙарҙан Н. Белкина 2 минут 31,2 секундта үтеп, икенсе урынды алды.

Иптәш В. Кривошеин, шулай уҡ 5000 метр араны 15 минут 29,7 секундта үтеп, икенсе урынды алды. Был, беренсе разряд нормаһынан 0,3 секундҡа ғына кәм, тигән һүҙ.

Диск ырғытыу буйынса Н. Воронцова беренселекте (32 метр 9 сантиметр), А. Антипина өсөнсө урынды (30 метр 15 сантиметр) алды.

Н. Кузнецов таяҡ менән бейеклеккә һикереүҙә икенсе урынды алды.

Башҡортостан спортсмендәре, ғөмүмән, матчта дүртенсе урынды алдылар.

А. Ханчин.

Ағас орлоктары йыйнау

Ык лесничествоһының лесниге иптәш М. Нәфиҡов былтыр Күгәрсен районы урмандарында 3268 килограмм имән сәтләүеге йыйнап алды. Был, бирелгән пландың 252 процентен тәшкил итте. Имән сәтләүеге әҙерләү заданиеһен Мраҡ лесничествоһы лесниктәренән F. Сафин, Ф. Каршин, А. Кутузов һәм башҡа иптәштәр ҙә арттырып үтәнеләр. Күгәрсен лесхозы, 35 тонна имән сәтләүеге әҙерләп, уны ҡыш яҡшы шарттарҙа һаҡланы.

Яҙ етеү менән лесхоз Куйбышев ГЭС-ына 15 тонна имән сәтләүеге оҙатты. Академик Т. Д. Лысенко методы буйынса квадратлап-оялап ултыртҡан ваҡытта был материал менән 500 гектар самаһы ерҙе йәшелләндерергә мөмкин.

Корея Халк-Демократик Республикаһы сит ил эштәре министренең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 19 май. (ТАСС). Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының сит ил эштәре министры Пак Хен Ен Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына түбәндәге белдереүҙе ебәрҙе.

БМО Генеральный Ассамблеяһының председателенә,

Именселек Советенең председателенә.
Лейк-Саксесс — Нью-Йорк.

Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының хөкүмәтенә шулар билдәле булды, май башында Американың Кореялағы командованиеһы БМО-ға «Төньяҡ Корея армияһы генеральный штабының икенсе бүлеге приказы» һәм «Төньяҡ Корея армияһының дүртенсе пехота дивизияһы командиренең боевой приказы» сифатында килтерелгән ике документте тапшырған. Күрһәтелгән документтәрҙең икеһе лә Американың Кореялағы йыртҡыслығы менән нәфрәтләнгән һәм АҠШ-тың ҡоралы интервенцияһын туҡтатыуҙы талап итеүсе бөтә донъя общественный фекерен алдау маҡсаттарында Америка командованиеһы тарафынан төҙөлгән тупаҫ ялғанлыҡ булып тора, тип белдерергә мин полномочие алдым. Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының тейешле харби органының ошо белдереүгә теркәлгән хәбәрендә америкалылар тарафынан килтерелгән «Төньяҡ Корея армияһы приказдарының» ялған характеры тулыһынса асыла.

Американың был нәүбәттәге ялған документенең иҫәк уйлашһыҙ һәм килбәтһеҙ төҙәлеүен хатта харби эште белмәүсе кешегә лә аңлауы ҡыйын түгел. Ысынлап та, юғарыла әйтелгән «приказдарҙа» беҙҙең армиябыҙ Корея Халыҡ армияһы (КНА) урынына «Төньяҡ Корея армияһы» тип атала. Был исем тик хөкүмәттәре Корея Халыҡ-Демократик Республикаһына (КНДР) ҡарата дошманлыҡ мөнәсәбәттәрендә булған илдәрҙә генә ҡулланыла. Юғарыла әйтелгән «приказдарҙа» Кореяның күп кенә географик пункттары япон телендә әйтелә, ләкин 1945 йылдың 16 ноябрендә үк Төньяҡ Кореяның юстиция департаменте [illegible]

[illegible] Ялған документтәрҙең Кореялағы һуғыштың тап уң беренсе айында ғына ла сығарылыуы ла үҙенә иғтибарҙы йәләп итә. Быға тиклем Макартур Төньяҡ Корея

территорияһының байтаҡ өлөшен ваҡытлыса оккупациялай алһа ла, бындай тәр ялған документте сығарырға батырсылыҡ итмәне. Күрәһең, Риджуэй үҙ хужаларының булдыҡлыраҡ хеҙмәтсеһе булып сыҡҡан, ә Кореяға ҡаршы ялған документтәргә мохтажлыҡ Вашингтонда һуңғы ваҡытта ҡырҡа артты. АҠШ хөкүмәте, Корея халҡына ҡаршы үҙ агрессияһын аҡларға ынтылып, Кореяла барлыҡҡа килгән һуғыш өсөн яуаплылыҡты КНДР хөкүмәтенә аударырға беренсе тапҡыр ғына маташмай инде. Ләкин Төньяҡ Кореяның Көньяҡ Кореяға һөжүм итеүе тураһында америкалылар тарафынан диктовать ителгән ялғанды КНДР хөкүмәте кире ҡағылмаҫлыҡ факттар һәм документтәр нигеҙендә селпәрәмә килтерҙе һәм Кореялағы һуғыштың ысын гәйеплеләре булып Америка империалистәренең һәм Көньяҡ Кореялағы уларҙың лисынмансы агентураһының тороуын иҫбатланы.

1950 йылдың 28 сентябрендә БМО-лағы үҙенең белдереүе менән КНДР хөкүмәте лисынмансы хөкүмәттең Халыҡ армияһы ҡулына төшкән йәшерен архиве материалдарында америкалыларҙың һәм лисынмансылларҙың 1950 йылдың 25 июнендә Төньяҡ Кореяға яһалған һөжүмен әҙерләүҙең бөтә тарихен асты. Лисынмансылларҙың йәшерен архивенең күрһәткән материалдары «Кореялағы граждандар һуғышының барлыҡҡа килеүендә гәйепле булыусылларҙы фашлаусы документтәр һәм материалдар» тигән йыйынтыҡта КНДР хөкүмәте тарафынан иғлан ителделәр. Корея Халыҡ-Демократик Республикаһына уларҙың һөжүм итеүен фашлаусы беҙҙең тарафтан БМО-ға тапшырылған ышаныслы документтәрҙе кире ҡағыу менән сығыш яһарға АҠШ хөкүмәте лә, Ли Сын Мандың марионет хөкүмәте лә батырсылыҡ итмәне, сөнки был документтәрҙе кире ҡағырға мөмкин түгел ине — енәйәтселәр енәйәт өҫтөндә тотолдолар. Шулай итеп, Кореялағы һуғыштың барлыҡҡа килеүендә ысын гәйепле булыусылар бөтә донъя алдында күптән инде фаш ителделәр, һәм улар Корея [illegible]

[illegible] ысын авторҙарын баштан-аяҡ фаш итә. [illegible] тарттырылыуға тейештәр.

Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының сит ил эштәре министры Пак Хен Ен.
Корея, Пхеньян, 1951 йыл, 18 май.

Англияның Советтәр Союзында булған эшселәр делегацияһының пресс-конференцияһы

ЛОНДОН, 20 май. (ТАСС). Англияның күптән түгел Советтар Союзында булған эшселәр делегацияһы 19 майҙа Мәскәүҙән Англияға ҡайтты. Делегаттар Англия матбуғаты вәкилдәре менән үҙҙәренең СССР-ҙа булыуҙан алған тәрән тойғолары тураһында һөйләнеләр.

Пресс-конференцияла делегация етәксеһе шахтер Леонард Харрис асты, ул делегация ағзаларының [illegible]

[illegible] араһында тыныслыҡты ныҡытыу эшенә ярҙам итәсәкбеҙ».

Советтар Союзында хеҙмәт шарттары тураһында һеҙҙең фекерегеҙ нисек, тигән һорауға яуап биреп, Харрис совет [illegible] ноктар тураһындағы тойғолары менән уртаҡлашты. Ул, «Мин заводтарҙа һәм фабрикаларҙа Англияла бер ҡасан да күрмәгән оборудованиеларҙы күрҙем», тип белдерҙе.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халк армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 20 май. (ТАСС). Корея Халыҡ-Демократик Республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 20 майҙа, Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, 38-се параллелдән көньяҡтараҡ бөтә фронт буйынса дошмандың контратакаларын кире ҡағып, уны көньяҡҡа сигендереүҙе уңышлы дауам иттерәләр, тип хәбәр итте.

Халыҡ партизандары, Халыҡ армияһы частәренә ярҙам күрһәтеп, дошман тылында һуғыш хәрәкәттәре йәйелдерәләр. Һуңғы көндәрҙә партизандар 4.620 винтовка, 101 еңел пулемет, 33 ауыр пулемет, төрлө калибрҙа 38 орудие, 17 радиоустановка, 4 автомашина һәм бер нисә йөҙ мең патрон ҡулға төшерҙеләр.

Демократик йәштәрҙең Бөтә Донъя Федерацияһы исполкомының буласаҡ ултырышы

БУДАПЕШТ, 20 май. (ТАСС). Демократик йәштәрҙең Бөтә Донъя Федерацияһы (ВФДМ) секретариатының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 24 майҙан 27 майға тиклем Будапештта ВФДМ исполкомының ултырышы үткәреләсәк. Исполком түбәндәге мәсьәләләрҙе тикшерәсәк:

1. Йәштәрҙең үҙенең тормош кимәлен күтәреү өсөн көрәшен көсәйтеү һәм был өлкәлә ВФДМ-ның бурыстары.

2. Йәштәрҙең һәм студенттарҙың өсөнсө бөтә донъя фестиваленә әҙерлек.

3. ВФДМ советенең нәүбәттәге ултырышын саҡырыу.

Көн тәртибенең беренсе мәсьәләһе буйынса доклад менән ВФДМ председателе Эн Ико Берлингуэр сығыш яһаясаҡ. Икенсе мәсьәләһе буйынса — ВФДМ-ның генеральный секретары Жак Дени, өсөнсө мәсьәлә буйынса — ВФДМ-ның вице-председателе Фрэнсис Дэймон сығыш яһаясаҡ. Ултырышта ВФДМ исполкомының 25 илдән вәкил булған члены ҡатнашасаҡ. Ултырышҡа шулай уҡ милли һәм халыҡ-ара йәштәр ойошмаларынан саҡырылған вәкилдәрҙең дә килеүе көтөлә.

Редактор F. F. ҒАФАРОВ.

ТЕАТР

Тулкынландырғыс спектакль

Башҡорт Академия драма театры 19—20 майҙа 1950—1951 йылғы сезондағы һуңғы спектакль итеп, төрөкмән яҙыусыһы — Сталин премияһы лауреаты Хәсән Мөхтәровтең «Аллан семьяһы» пьесаһын ҡуйҙы. Был постановканы театрҙың үткән сезонындағы уңышлы спектаклдәренән береһе тип һанарға кәрәк. Театр Өфө тамашасыларын туғандаш республиканың культура өлгәшеүҙәре менән таныштырып ҡына ҡалманы, шул уҡ ваҡыт совет кешеләрендә иң яҡшы мораль сифаттар тәрбиәләү буйынса ла күренекле хеҙмәт башҡарҙы. Пьесаны сәхнәгә һәләтле йәш режиссер Шәүрә Мортазина ҡуйҙы, художник Р. Калимуллин оформлениеһе.

«Аллан семьяһы» — башҡорт совет тамашасыларына ла яҡын, уртаҡ тойғоларҙы асыҡ сағылдырған әҫәр. Уның сюжете ҡатмарлы түгел: ваҡиға утыҙ йыл буйы тимер юлда хеҙмәт иткән ҡарт эшсе Аллан Мәрҙәнов семьяһы тирәһендә, ике тәүлек ваҡыт эсендә генә бара. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ бөгөнгө Төркмәнстан халҡының ни менән йәшәүен, нисдай ҡайнар тойғолар кисереүен, үҫешен күҙ алдына баҫтыра алабыҙ. Аллан семьяһы [illegible]

тыусылар, инженерҙар, врачтар, яҙыусылар, искусство работниктәре һәм башҡалар булып үҫәләр. Был бик типик күренеш. Пьеса тап ошо типик хәлдә художестволы дөрөҫ сағылдырыуы, драматургик яҡтан оҫта эшләнеүе менән үҙен ҡараусыларҙы тулҡынландыра ла. Хатта ваҡыты менән, ваҡиғаның алыҫ Ашхабадта барғанын онотоп, үҙебеҙҙең ысынбарлыҡ һымаҡ хис итәһең. Тамашасылар шуға күрә лә спектаклде яратып ҡарайылар.

Коллектив спектаклде әҙерләүгә бик тырышып килгән, ныҡлы берҙәм ансамбль тыуҙырған. Барлыҡ актерҙар ҙа бер үк художество юғарылығында уйнанылар тип әйтерлек. Айырыуса Fата (Вәли Ғәлимов), Байрам (Ғәлимьян Карамышев), Аллан (Әмин Зөбәиров), Яҙгел (Лалә Әхтәмова), Алтын Солтанов (Ф. Вахитов) образдары ныҡ хәтерҙә ҡалдылар.

Байрам — Бөйөк Ватан һуғышында батырлығы менән танылған, хәҙер районда беренселекте тотҡан миллионер колхоздың председателе. Ул ғорур, ҡайнар йөрәкле кеше, иркен йәшәргә ярата. Шул уҡ ваҡыт унда совет кешеләренә ят булған сифат — [illegible]

колхоздың счетоводы Алтын уға ҡаршы торалар. Бары әсәһе Бикә генә (Даутова), үҙенең сикләнгәнлеге һәм әсәлек хисе ҡушыуы буйынса, уны яҡлай. Башҡалар семья намыҫын һәм шул уҡ ваҡыт совет кешеһенең намыҫын да яҡлау өсөн аңлы рәүештә берҙәм фронт торалар. Аҙаҡ килеп, Байрам үҙ хатаһын аңлай.

Бөтә ваҡиға быны ошоға ҡоролған. Ләкин, шул уҡ ваҡыт, әҫәрҙәге һәр образ үҙенең ҙур тормошо, интерестәре менән йәшәй. Автор Яҙгелдең композитор булырға ынтылыуын һәм Алтын менән мөхәббәт мөнәсәбәттәрен дә, ауыл хужалығы белгесе Ғатаның тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу өсөн булған хыялдарын һәм уның энеһе Ҡорбандың (артист Әюпов) тырышып экзамендарға әҙерләнеүен һәм башҡа бик күп деталдәрҙе лә әҫәрҙең сюжет туҡымаһына драматургик оҫта бәйләгән. Шунлыҡтан тамашасылар бер Байрамдың яҙмышы менән генә мауыҡмай, бөтә ваҡиға барышына актив иғтибар түләйҙәр.

Театр, — әгәр костюм һәм оформлениелағы ҡайһы бер сыбарлыҡтарҙы иҫкә алмағанда,—экзотикаға артыҡ бирелмәй, реалистик спектакль тыуҙырған. Уйында, спектаклдең бөтә тонында тәбиғилек һиҙелеп тора.

Ҡорбан образын йәш артист Әюпов бик үҙенсәлекле итеп, бирелеп башҡарҙы. Уны, бөтә пьеса буйынса тип әйтерлек, тамашасылар йылы ҡаршыланылар. Ул үҙенә математик профессияһы һайлаған йәш кеше. Беҙҙенсә, ул ныҡ уйла- [illegible]

етмәй. Ә бит ул өсөнсө шаршауҙа Байрам менән булған сәхнәһен һәм спектаклдең ҡалған өлөштәрен тотанаҡлы, бик яҡшы алып барҙы. Күрәһең, образды ошо планда бирергә кәрәктер ҙә.

Зинаида Васильевна (Тәлиға Бикташева) — эвакуация ваҡытында Ленинградтан килеп, Аллан семьяһында, үҙ семьяһындағы кеүек, хөрмәтләнеп йәшәгән, медицина институтын тамамлаған рус ҡыҙы. Был образ аша автор халыҡтар дуҫлығы темаһын ғәжәп матур хәл иткән. Шул уҡ ваҡыт уның менән Fата араһында, әлегә әйтелмәгән, ләкин ысын йөрәк хистәре лә йәшәй. Тәлиға Бикташева, нигеҙҙә, образды дөрөҫ хәл иткән: уның семья члендәре менән яҡын туғанлыҡ мөнәсәбәттәре ышандырырлыҡ. Ләкин мөхәббәт һыҙығын алып барыуҙа ул, ни өсөндөр, тәбиғилектән сыҡты. Беҙ был таңғалдә юғары белем алған, асыҡ ҡарашлы, бөтәнгә совет ҡыҙын күреү урынына, ихтыярһыҙ рәүештә... Таңсулпан, Ғәлимә образдарын хәтерләнек. Ә бит ул образдар бер-береһенә, ер менән күк араһы кеүек, ҡапма-ҡаршылар. Артистҡаға был турала ныҡыраҡ уйлап, образдың рухына инеп, тәрәнрәк итеп бирергә тырыша төшөргә кәрәк ине.

Аллан семьяһы башҡорт Академия драма театрының репертуарында оҙаҡ ваҡытҡа һаҡланырлыҡ әҫәр. Тәржемәлә айырым терминдарҙа, һөйләм әйләнештәрендә ҡолаҡҡа ятышһыҙ яңғыраған урындар ҙа юҡ түгел. Әҫәр тәрән психологик кисерештәргә ҡоролған. Актерҙарҙың башҡарыуында ҡайһы бер сәхналар- [illegible]

Бәхит Бикбай.



Колхоз етәкселәре!

КОЛХОЗ МИЛКЕН ИРКЛЕ СТРАХОВАТЬ ИТЕҮҘЕ ТӘЬМИН ИТЕГЕҘ

Хужалыкка стихиялы бәлә-ҡазалар тарафынан яһалған зыянды аякка баҫтырыуҙа иркле страховать итеү ҙур ярҙам булып тора.

Колхоздарға түбәндәгеләрҙе страховать итеү хоҡуҡы бирелгән:

Ауыл хужалығы культураларының сәсеүлектәрен— боҙ һуғыуҙан, көслө ямғырҙарҙан, дауылдарҙан, тамырҙа килеш яныуҙан, еүешләнеүҙән, туңыуҙан, серееүҙән, ҡырау төшөүҙән һәм һыу баҫыуҙан һәләк булыу йәки бер ни тиклем зарарланыу ваҡиғаһында.

Ауыл хужалығы продукцияһын: иген, он, ярма, көрпә, бесән, һалам, йәшелсәләр, ит, май, йомортҡа, бал һәм башҡалар — уларҙың янғын, дауыл һәм башҡа стихиялы бәлә-ҡазалар арҡаһында юҡ ителеүе йәки зарарланыуы ваҡиғаһында.

Ауыл хужалығы малдарын: аттар, мөгөҙлө эре малдар, һарыҡтар, кәзәләр, сусҡалар, питомниктарҙағы тире бирә торған йәнлектәр, йорт ҡуяндары, фермалардағы ҡоштар, шулай уҡ рамалы умарталардағы бал ҡорттары күстәре — уларҙың ауырыуҙан һәм күнелһеҙ ваҡиғаларҙан һәләк булыуы ваҡиғаһында.

Транспорт средстволарын: автомашиналар, мотоциклдар, моторлы кәмәләр һәм башҡалар—янғындан, шартлауҙан, аварияларҙан юҡҡа сыҡҡан ваҡытта.

Колхоз правлениелэре! 1951 йылға сметаларҙа иркле страхованиеға расходтарҙы күҙҙә тоторға онотмағыҙ!

Страхование договорын төҙөү өсөн Госстрах инспекцияһына мөрәжәғәт итегеҙ.

Государство страхованиеһының Башҡорт АССР-ы буйынса управлениеһы.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбасары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П04302 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 35 000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

№ 100 (8817)
1951 йыл
23
МАЙ
шаршамбы

хаҡы 20 тин.

Б Ө Г Ө Н Г Ө Н О М Е Р Ҙ Ә:

ВАҠЫТТЫ БӨТӘ ТУЛЫЛЫҒЫ МЕНӘН ФАЙҘАЛАНЫРҒА, СӘСЕҮ ЭШТӘРЕН ТИҘЕРӘК ТАМАМЛАРҒА! (1-се бит).
Х. Йосопов. — Кушнаренко районында сәсеү эшен һуҙалар. (1-се бит).
МӘКТӘПТӘРҘӘ ЭКЗАМЕНДӘР (1-се бит).
ЭКОНОМИК БЕЛЕМДӘРЕН КҮТӘРЕҮСЕЛӘРГӘ ЯРҘАМҒА. П. Иванов. — СССР промышленносеның төп фондтары һәм производство ҡеүәттәре (2-се бит).
СИК БУЙЫ УЧАСТКАЛАРЫН АЛМАШЫУ ТУРАҺЫНДА СОВЕТТАР СОЮЗЫ МЕНӘН ПОЛЬША РЕСПУБЛИКАҺЫ АРАҺЫНДА ДОГОВОР ТӨҘӨҮ (2-се бит).
Ғ. Ғәлиев. — Халыҡты кино менән хеҙмәтләндереү эшен артабан күтәреү өсөн (2-се бит).
ЙӘШ ШАҒИР КАРАМ БАКИРОВ ШИҒЫРҘАРЫ. (3-сө бит).
БАҪЫУ ЭШТӘРЕ АЛДЫНҒЫЛАРЫНДА.
Н. Наумкин. — Юғары агротехника яҙы (3-сө бит).
Сабирьян Әхтәмов. — Намыҫлы хеҙмәт еңеү килтерҙе (3-сө бит).
КИНО. З. Ишмаев. — «Донец шахтерҙары» (4-се бит).
ДҮРТ ДЕРЖАВА СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРҘӘРЕ УРЫНБАСАРҘАРЫНЫҢ ӘҘЕРЛЕК КЕҢӘШМӘҺЕ (4-се бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Комбайндарҙы ваҡытында һәм яҡшы сифатлы итеп ремонтларға

Республикабыҙҙың социалистик ауыл хужалығы йылдан-йыл ҡеүәтле яңы техника менән байытыла бара. Хәҙер колхоздарҙа меңәрләгән ҡеүәтле тракторҙар, үҙе йөрөй торған комбайндары һәм бай техниканы тулыһынса үҙләштергән кадрҙары булған МТС һәм ЛЗС-тар хеҙмәтләндерә.

Уҙған йылда ваҡ ауыл хужалығы артелдәренең эре колхоздарға берләшеүе һәм уларҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу — ауыл хужалығындағы бай техниканы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуға киң юл асты. Урындағы партия, совет ойошмаларының, ауыл хужалығы органдарының, шулай уҡ МТС, совхоз һәм колхоз етәкселәренең машина-трактор паркын файҙаланыуҙы яҡшыртыуҙары, быйыл яҙғы баҫыу эштәрен байтаҡ иртә срокта һәм яҡшы сифатлы итеп үткәреүгә мөмкинлек бирҙе.

Яҙҙың яҡшы килеүе һәм ямғырҙарҙың яуып тороуы уҗымдарҙың һәм шулай уҡ яҙғы ашлыҡ культураларының берҙәм һәм тиҙ үҫеүен тәьмин итте. Хәҙер күп кенә колхоздарҙа сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү — утау эштәре башланды.

Ләкин яҙғы сәсеү юғары урожай өсөн көрәштең тәүге этабы ғына әле ул. Иң мөһиме уларҙы бөтә йәй буйына хәстәрлек менән тәрбиәләү һәм колхозсыларҙың, механизаторҙарҙың күп хеҙмәт һалып үҫтергән урожайын ваҡытында, юғалтыуһыҙ йыйып алыуҙан тора. Шуға күрә сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәрен киң йәйелдереү менән бер үк ваҡытта урожай йыйнауға әҙерлекте лә алып барырға кәрәк. Был — партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының, шулай уҡ МТС, совхоз етәкселәренең, бөтә колхозсыларҙың, механизаторҙарҙың һис көсөктергеһеҙ бурысы ул.

Билдәле булыуынса, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа урожайҙың күпселек өлөшө комбайндар менән йыйыпала. Ө быйыл [illegible]

[illegible]

Республикабыҙ колхоздарында, МТС һәм совхоздарында комбайндарҙы һәм башҡа урожай, бесән йыйнау машиналарын ремонтлау барышы тураһында Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советенең ҡарары нәшер ителде. Был ҡарарҙа ремонт эштәрен өҙөүсе Архангель, Ташлы күл, Бурлы, Ерген, Стәрлетамаҡ, Благовар, Ҡорос һәм башҡа күп кенә МТС етәкселәре ҡаты тәнҡитләнде. Шулай уҡ республика Ауыл хужалығы министерствоһы эргәһендәге ремонт тресының (директоры иптәш Трапезников) заводтарының МТС-тарҙың заказдарын үтәүгә, уларҙы запас частәр менән тәьмин итеүгә сиктән тыш яуапһыҙ ҡарауҙары күрһәтеп үтелде.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Ауыл хужалығы министерствоһын, совхоздар трестарын, район Советы исполкомдары председателдәрен, МТС һәм совхоз директорҙарын урожай йыйнауға әҙерлектә булған был хаталарҙы ашығыс төҙәтергә, комбайндар, молотилкалар, урғыстар һәм иген таҙартыусы машиналар ремонтлау графигенең һис һүҙһеҙ үтәлеүен тәьмин итергә мәжбүр итте.

Ремонтсыларҙың хеҙмәтен дөрөҫ ойоштороу һәм был эшкә бөтә комбайнерҙарҙы һәм уларҙың ярҙамсыларын, колхоз тимерселәрен, шулай уҡ баҫыу эштәренән бушаған тракторсыларҙы ылыҡтырыу, ремонт бригадаларын һәм эш урындарын кәрәкле инструменттәр, запас частәр менән тәьмин итеү, һәр бер МТС-та һәм һәр бер узелда ремонттың барышына нығыл контроль булдырыу графиктың аҙма-аҙ үтәлеп барыуын тәьмин итәсәк.

Ремонт эштәре прогрессив узловой метод нигеҙендә ойошторолорға тейеш. Ләкин күп кенә МТС-тарҙа был методты баһаламайҙар, алдынғы технологияны насар ҡулланалар. Мәҫәлән, Белоҡатай МТС-ында күптән кире ҡағылған методты — һәр бер комбайнерҙың үҙ машинаһын ремонтлау методын ҡулланалар.

[illegible]

Бөтә урожай ... [illegible]

КОЛХОЗДА В. И. ЛЕНИНГӘ ҺӘЙКӘЛ

ЕРЕВАН, (ТАСС). Алаверд районы ... [illegible]

Пар һөрәләр

[illegible]

Ә. Даутов.

[illegible]

С. Нигмәтуллина.

ВАҠЫТТЫ БӨТӘ ТУЛЫЛЫҒЫ МЕНӘН ФАЙҘАЛАНЫРҒА, СӘСЕҮ ЭШТӘРЕН ТИҘЕРӘК ТАМАМЛАРҒА!

☆

Депутат етәкселек иткән колхозда

БАССР Верховный Советы депутаты иптәш Хәким Шәнгәрәев етәкселек иткән Фрунзе исемендәге колхоз баҫыуҙарында эш ҡайнай. Колхозсылар ҡиммәтле эш ваҡытын тулыһынса файҙаланалар. Улар баҫыуҙа ҡунып эшләйҙәр. Эштең яҡшы ойошторолоуы колхозсыларҙы хеҙмәткә дәртләндерҙе. Бындай эштең һөҙөмтәләре лә яҡшы.

Бригадалар үҙ-ара ярышалар. Иптәш Мәғзүм Мөжипов етәкселек иткән 5-се номерлы бригада алдынғылыҡты алып тора. Ул иртә культуралар сәсеүҙе 6 эш көнөндә тамамланы. Бөтәһе 286 гектар майҙанда яҙғы сәсеү үткәрелде. Сәсеүселәрҙән Хәнүс Хаматханов, Ғабдулла Насибуллин, Мөнир Абраров, Ғәли Тимерғәлиев иптәштәр ат сәскесе менән һәр көндө 6—7,5 гектар майҙанда ашлыҡ сәстеләр. Эштең сифаты ла яҡшы итеп башҡарылды.

— Быйыл беҙ 1043 гектар майҙанда бөртөклө культуралар, 70 гектар техник культуралар һәм 55 гектар үлән сәсергә тейешбеҙ. — ти колхоз председателе иптәш Шәнгәрәев.

Фрунзе исемендәге колхоз члендәре йөкләмәне намыҫ менән үтәйҙәр.

Хеҙмәттең дөрөҫ ойошторолоуы баҫыу эштәре башланыуҙың беренсе көндәренән үк матур һөҙөмтәләр бирҙе. Тәүге биш көндә 705 гектар майҙанда яҙғы сәсеү үткәрелеп, график 140 процентҡа үтәлде.

Колхоз хужалығының башҡа тармаҡтарында ла эш гөрләй. Коммунист Шәрипов етәкселегендәге төҙөү бригадаһы члендәре электр станцияһына капиталь ремонт үткәрәләр. Фермала хәҙер 50 баш ат һыйышлы һарай төҙөү тамамланып килә.

Был колхозда 15 гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртылған. Быйыл яңынан 2 гектар майҙанда ағас ултыртылды.

Баҡсасылыҡ бригадаһы колхозға һәр йылда 100-әр мең һум доход бирә.

Колхоздың 50 колхозсыны берләштергән күк һағыҙ бригадаһы бар. Күк һағыҙ плантациялары 35 гектар майҙанды алып тора. Былтыр унан меңдәрсә һум доход алынды.

Колхоз малдарға ныҡ аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн хәстәрлек күрә. Болондарҙы һәм сабынлыҡтарҙы таҙартыу ойошторолған. Бесән сапҡыс, салғы һәм башҡа инвентарҙар ремонтлана. Мал аҙыҡтары туплауға әҙерлек эштәре бара.

БАССР Верховный Советы депутаты иптәш Хәким Шәнгәрәев етәкселек иткән Фрунзе исемендәге колхоздың члендәре эрелә́телгән колхоз хужалығын алға ебәреү, колхозды миллионер ауыл хужалығына әйләндереү, үҙҙәренең культура көн-күреш шарттарын яҡшыртыу өсөн бына ошолай көрәшәләр.

Н. Таҡаев.
Ә. Киреев.

Балтач районы Фрунзе исемендәге колхоз.

☆ ☆

Юғары урожай өсөн көрәштә

Быйыл беҙҙең колхоз Молотов исемендәге күрше колхоз менән юғары урожай үҫтереү өсөн үҙ-ара ярышҡа сыҡты. Беҙ 940 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан уртаса 12-шәр, орлоҡсолоҡ участкаһынан 15-әр, 500 гектар һолоноң һәр бер гектарынан 15-әр, орлоҡсолоҡ участкаһының һәр бер гектарынан 18-әр, 491 гектар арыштың һәр бер гектарынан 15-әр центнер урожай үҫтереүгә йөкләмә алдыҡ.

Социалистик йөкләмәләрҙе үтәү өсөн ҡыштан бирле ныҡлы көрәш бара. Юғары урожай үҫтереүҙә агротехниканың ҙур роль уйнағанлығын колхозсылар яҡшы аңлайҙар. Шуға күрә лә баҫыу эштәрен агротехника талап иткәнсә үтәү өсөн көрәшәләр. Быйыл яҙ иртә килде. Был баҫыу эштәрен уңышлы ойоштороу өсөн ҙур уңайлыҡ тыуҙырҙы.

Дым һаҡлап ҡалыу өсөн беҙ көҙҙән һөрөп ҡалдырылған 500 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тоттоҡ, 200 гектар майҙанда ужым культураһы минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырылды.

Беҙҙең колхозды Аксен МТС-ының иптәш Хәбибуллин етәкселек иткән трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә. Колхоздың баҫыусылыҡ бригадалары трактор бригадаһы менән ныҡ бәйләнеш тоталар. Беҙ производство кеңәшмәләрен һәр ваҡыт тракторсыларҙың ҡатнашлығында уҙғарабыҙ. Унда теге йәки был эште уңышлы хәл итеү, юғары урожай үҫтереү тәжрибәләрен уртаҡлашыу мәсьәләләре ҡарала. Быйыл тракторҙар эшендә тотҡарлыҡ булмаһын өсөн колхозсылар бөтә сараларҙы күрҙеләр.

Бөтә көс яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәреүгә тупланды. Һәр көн баҫыу эштәрендә 439 кеше, 74 баш ат ҡатнашты, бер С—80, 3 СТЗ—НАТИ һәм тәгәрмәсле 2 трактор тәүлек буйына эшләне. Үҙ-ара ярышты киң йәйелдереп, колхозсылар үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты намыҫ менән үтәнеләр. Коммунист иптәш Хафизов етәкселек иткән 1-се номерлы баҫыусылыҡ бригадаһында атлы сәскес менән эшләүсе иптәш Әүхәт Ғәниев көн һайын 5 гектар урынына, 7 гектар, иптәш Шарипов етәкселек иткән 3-сө номерлы бригадала иптәш Зәкиев һәр көн 10,23 гектар ашлыҡ сәсте. Икенсе номерлы бригадала аттар менән ер тырматыуҙа Зәфәр Хәжиев, Әлфәт Яхин иптәштәр үҙ-ара ярышып, көн һайын 1,5 норма эшләнеләр.

Тракторсылар ҙа социалистик ярышта гүзәл эш өлгөләре күрһәтәләр. СТЗ—НАТИ тракторында эшләүсе коммунист иптәш Рифғәт Әхмәтгәрәев үҙ сменаһында 56-шар гектар, тракторист иптәш Миңнеғәли Нуриманов 62-шәр гектар ашлыҡ сәсте. Трактор сәскестәрендә эшләүсе коммунист Ғәбәй Зарипов, комсомолец Фәрит Насыров иптәштәр социалистик ярыштың алдынғы сафында булдылар. Колхозсыларҙың һәм тракторсыларҙың бер ҡарағынан икенсе ҡарағына тиклем баҫыуҙарҙа арымай-талмай эшләүҙәре арҡаһында һәр көн 190—200 гектар ашлыҡ сәселде. Һөҙөмтәлә беҙ 1732 гектар майҙанда иртә культуралар сәсеүҙе 9 эш көнөндә, 7 майға тамамланыҡ. Бойҙай һәм һоло культуралары барлыҡ тик көҙҙән һөрөп ҡалдырылған ерҙәргә урынлаштырылды. 300 гектар бойҙай арҡыры-буй ысул менән, 250 гектар бойҙай яровойлаштырылған орлоҡтар менән сәселде.

Хәҙер беҙҙә һуңғы культуралар сәселә. Уның өсөн ерҙәрҙе әҙерләп ҡуйҙыҡ. Беҙ 445 гектар майҙанда һуңғы культуралар сәсеүҙе лә ошо көндәрҙә тамамлаясаҡбыҙ.

Сәсеү эштәре менән бер үк ваҡытта, беҙ баҫыу һаҡлаусы урман полосалары үҫтереүгә лә ныҡ иғтибар итәбеҙ. Был эштә колхозда 28 кешенән торған махсус бригада эшләй. Иптәш Сатый Хужиев етәкселек иткән был бригада быйыл яҙ 15 гектар ағас ултыртты. Шулай уҡ элек ултыртылған 7 гектар майҙандағы урман полосаһы ремонтланды. Былардан башҡа, академик Лысенко методы буйынса 8,5 гектар майҙанда имән сәтләүектәре оялап ултыртылды. Хәҙер элек ултыртылған полосаларҙы тәрбиәләү эштәре ойошҡанлыҡ менән алып барыла.

Беҙ колхозыбыҙҙың бөтә баҫыуҙарында юғары урожай үҫтереү өсөн йәй буйына арымай-талмай эшләрбеҙ, социалистик йөкләмәбеҙҙе намыҫ менән үтәрбеҙ.

Ф. Әҙеуллин.

Әлшәй районы Ленин исемендәге колхоз председателе.

Учалы районы сәсеү планын үтәне

Райондың игенселәре 20 майға бөтә төр культуралар сәсеү планын үтәнеләр. «Ирәндек», «Совет», «Красный партизан» һәм Сталин исемендәге ауыл хужалығы артелдәре яҙғы баҫыу эштәрен айырыуса ойошҡанлыҡ менән үткәрҙеләр. Райком һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы сәсеү осоронда ошо колхоздарҙа булды.

Эрелә́телгән «Совет» колхозы 1950 гектар майҙанда, «Ирәндек» колхозы 1450 гектар, «Красный партизан» колхозы 3800 гектар, «Коммунар» колхозы 2780 гектар майҙанда яровой культуралар, мал аҙығы культуралары сәстеләр. Бөтәһе район буйынса 30.300 гектар майҙанда сәсеү үткәрелде.

Яҙғы баҫыу эштәрен өлгәле тамамлау, бөтәһенән элек, район партия ойошмаһының политик-тәрбиә һәм ойоштороу сараларына нықлы иғтибар итеүенә бәйләнгән. Партияның колхоз эргәһендәге тәүге ойошмалары агит-массовый эште юғары урожай өсөн көрәшкә йүнәлтеп алып барҙылар. ВКП(б) члендәре колхоз баҫыуҙарының яуаплы участкаларында эшләнеләр. Механизаторҙар сәсеүҙе иң ҡыҫҡа, агротехник срокта тамамлау өсөн бөтә көстәрен биреп эшләнеләр.

Т. Әмиров.

Мәктәптәрҙә экзамендәр

Экзамендәр уңышлы бара

Ишембай ҡалаһының 3-сө номерлы башҡорт мәктәбенә иртәнге сәғәт 8 тулғансы уҡ уҡыусылар йыйнағайны. Улар бөтәһе лә байрамса кейенгәндәр, йөҙҙәрендә шатлыҡ нурҙары балҡый. Был уларҙың экзамендәрҙе яҡшы әҙерлек менән ҡаршылағанлыҡтарын күрһәтә.

Кластар ҙа байрамса биҙәлгән. Унда партия һәм хөкүмәт етәкселәренең портреттәре, сәскәләр бәйләме. Сәғәт 9 тулыуға бөтә уҡыусылар ҙа кластарға инделәр. Мәктәптә тулы тәртип һәм тынлыҡ урынлашты.

9-сы класта ҙур тәжрибәле ҡарт уҡытыусы иптәш Үтәғолов геометрия фәне буйынса экзамен ҡабул итте. Уҡыусылар һорауҙарға тиҙ һәм тәплә яуап бирҙеләр. Һөҙөмтәләр ҙә яҡшы: бөтә уҡыусылар отличнә һәм яҡшы билдәләре генә алдылар.

РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы иптәш Нагаева 8-се кластарҙа алгебранан яҙма эш буйынса экзамен үткәрҙе, бында 38 уҡыусының бөтәһе лә «5» һәм «4» билдәләре генә алды.

10-сы класта рус теленән сочинение булды. Уҡыусыларҙың күбеһе «А. Фадеевтең «Йәш гвардия» романында комсомолецтәр образы» тигән теманы һайлап алды.

Киҫә ҡаланың бөтә мәктәптәрендә экзамендәр башланды. Мәғариф бүлеге мөдире иптәш Баранов экзамендәрҙең бөтә йылдарға ҡарағанда ла ойошҡан рәүештә башланғанлығын һәм яҡшы һөҙөмтәләр бирәсәклеген белдерҙе.

Б. Морҙағәлиев.

Ҙур шатлыҡ, күтәренке күңел менән

Өфө ҡалаһының Максим Горький исемендәге өсөнсө номерлы ҡыҙ балалар мәктәбе матур итеп йыйһазландырылған, лозунгылар, плакаттар, бөйөк Ленин һәм Сталиндең портреттәре менән биҙәлгән. Мәктәп ишегенең өҫтөнә ҙур хәрефтәр менән: «Рәхим итегеҙ» тигән һүҙҙәр яҙылған.

Экзамендәр башланыу көнө уҡыусылар өсөн дә, общественность өсөн дә, ата-әсәләр өсөн дә, ошо мәктәпте элек тамамлап сыҡҡан кешеләр өсөн дә шатлыҡлы байрам көнө булды.

Мәктәп директоры иптәш Коротков исеменә ошо мәктәпте элек тамамлаған уҡыусыларҙан: Мәскәүҙән, Ленинградтан һәм башҡа ҡалаларҙан күп кенә телеграммалар алынды.

— Ҡәҙерле уҡытыусыларҙы һәм ҡыҙҙарҙы, — тип яҙа үҙенең телеграммаһында хәҙерге ваҡытта Мәскәүҙә Ломоносов исемендәге Государство университетында уҡыусы Мирра Ибраһимова, — экзамендәр башланыу айҡанлы бөтә йөрәктән ҡотлайым һәм отличнә уңыштар телайем.

Иртәнге сәғәт һигеҙҙә мәктәп бинаһы балалар менән тулы ине. Бөтә кластарҙың уҡыусылары ла экзамендәрҙе уңышлы тапшырасаҡтарына ышаныс менән тулылар.

Беренсе көндә бөтәһе 587 уҡыусы экзамен бирҙе. Шуларҙың 77-һе 10-сы класты тамамлаусылар.

Ғ. Үлмәсов.

КУШНАРЕНКО РАЙОНЫНДА СӘСЕҮ ЭШЕН ҺУҘАЛАР

Кушнаренко районында яҙғы сәсеүҙең башланыуына инде өс аҙнанан артыҡ ваҡыт үтте. Ләкин бында ваҡыт үтеү менән иҫәпләшмәйҙәр. Күпселек колхоздар эште бик аҡрын темп менән алып баралар.

39 колхоздың береһе лә сәсеү планын үтәмәгән әле. Районда сәсеүҙең һәм һөрөүҙең биш көнлөк графигы бер генә тапҡыр ҙа үтәлгәне юҡ. Ә район етәкселәре график үтәлешенә ҡәнәғәтләнерлек контроль яһамайҙар. Колхоз етәкселәре график өҙөлөүен баҫыу эштәренең һуңлап башланыуы һәм сәсеү орлоҡтарының етешмәүе менән аңлатмаҡсы булалар. Ләкин төп сәбәп колхоздарҙа эштең насар ойошторолоуында, әске мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланмауҙа, тракторҙарҙы тулы нагрузка менән эшләтмәүҙә.

Бына Карл Маркс исемендәге колхоз. Бында быйыл 1467 гектар ашлыҡ сәселергә һәм 906 гектар ер һөрөлөргә тейеш. Баҫыу эштәре башланыуға бер ай ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, бында ни бары 1074 гектар ашлыҡ сәселгән, 631 гектар ер һөрөлгән. Колхозда тағы ла 393 гектар һөрөп сәсәһе бар. Ә колхоз быйыл яҙғы сәсеүҙе 7 эш көнөндә бөтөрөргә социалистик йөкләмә алғайны. Шулай итеп, йөкләмә үтәлмәй. Бында, һәр көндә 168 гектар ашлыҡ сәсеү урынына, 48 гектар ғына сәселде. Колхозда эшсе көстәр ҙә һәм сәсеү орлоҡтары ла етерлек. Эштең аҡрын барыуында төп сәбәп шунда: колхоз председателе Өсхәт Дусеев һәм тәүге партия ойошмаһы секретаре Шәриязданов иптәштәр тәүге көндәрҙә үк баҫыу эштәрен ойоштороуға, барлыҡ колхозсыларҙы эшкә туплауға иғтибар итмәнеләр. Колхоздағы 40 агитаторҙан торған агитколлектив яҙғы сәсеүҙе агротехник срокта тамамлауҙы үҙенә бурыс итеп ҡуймаған. Агитаторҙарҙан Ғәйзетдинов, Фәүзиә Мостафина һәм Сәғит Шәрәфетдинов иптәштәр колхозсылар араһында бер төрлө лә аңлатыу эштәре алып бармайылар. Ә агитатор иптәш Рабиға Чаньшева баҫыуҙа бер тапҡыр ҙа булманы. Һөҙөмтәлә баҫыуҙа эшләүсе ҡайһы бер колхозсылар көндәлек эш нормаһын белмәйҙәр һәм норманы үтәмәйҙәр.

Колхоздағы 22 баш ат һәм 47 баш эш үгеҙе ҡәнәғәтләнерлек файҙаланылмай. Бында быйыл йәйле тартыу көсө менән бер гектар ҙа ер һөрөлмәне, тик 40 гектар ғына ер тырматылды.

Был колхозды хеҙмәтләндергән Кушнаренко МТС-ы ла төҙөлгән договор йөкләмәләрен үтәмәй. Иптәш Миңнеәхмәт Шәйхәттәров етәкселек иткән 3-сө номерлы трактор бригадаһы был колхозда быйыл 430 гектар ер тырматырға, 840 гектар һөрөргә, 571 гектар культивациялаға һәм 1250 гектар майҙанда сәсергә тейеш ине. Ләкин бригадалағы 5 трактордың икеһе бөтөнләй эшләмәй ултыра. Тракторҙар тулы нагрузка менән эшләмәйҙәр. Тракторсылар смена нормаларын үтәмәйҙәр. Был бригада ошо ваҡытҡа тиклем ни бары 631 гектар ер һөргән, уның да 50 гектары предплужникһеҙ һабан менән башҡарылған. Колхоз етәкселәре бракҡа күҙ йомоп ҡарайҙар. Трактор бригадаһын хеҙмәтләндереүгә 39 колхозсы, 2 ат, 10 үгеҙ беркетелгән. Ләкин улар ҙа тракторҙар менән бергә эшләмәй ваҡыт үткәрәләр.

МТС директоры иптәш Рейм колхоз менән төҙөшкән договорҙы тиҙерәк үтәү, трактор бригадаларының эшен яҡшыртыу менән шөғөлләнмәй. МТС-тың күсмә мастерскойы техник ярҙамды ваҡытында күрһәтмәй.

Шәрип МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа ла яҙғы сәсеү оҙаҡҡа һуҙылды. Был МТС зонаһында булған 9 колхоздың береһе лә сәсеү планын үтәмәгән әле.

Шәрип МТС-ы зонаһында иң эре хужалыҡтарҙың береһе Калинин исемендәге колхоз. Уның яҙ сәсеү майҙаны 2950 гектар. Бында МТС-тың 9 тракторы эшләй. Шулай уҡ колхоздың үҙенең йәнле тартыу көстәре бар. Быларҙы тулыһынса һәм дөрөҫ файҙаланғанда, көнөнә кәмендә 220 гектар ашлыҡ сәсергә һәм 170 гектар ер һөрөргә мөмкин. Колхозда былтыр 1000 гектар туңға һөрөлгән ер булыуын иҫәпкә алғанда, бында яҙғы сәсеүҙе 9-10 көндә тамамларға мөмкин. Ләкин колхозда яҙғы сәсеү оҙаҡҡа һуҙылды.

Бында ла йәнле тартыу көстәре, шулай уҡ тракторҙар ҙа тулы ҡеүәтендә эшләмәйҙәр. Техник төҙөк булмағанлыҡтан көн һайын 4 трактор тик тора. Тракторҙар көн һайын 220 гектар ашлыҡ сәсәһе урынына 82 гектар сәсә, 170 гектар ер һөрәһе урынына 33-35 гектар һөрә. Трактор бригадаһы бригадиры иптәш Назаров тракторҙы техник тәрбиәләүгә иғтибар бирмәй. Шуның арҡаһынан тракторҙар йыш ватылалар. Тракторист иптәш Ғәйнислам Хәмәдиев эшләгән СХТЗ тракторы һәр бер 3-4 көн һайын ватыла һәм бер көн эшләмәй тора. Бригадир Назаров һәм МТС-тың өлкән механигы Сафин иптәштәр ярҙам итмәйҙәр.

Тракторҙарға заправка үткәреү өсөн 2-3 сәғәт ваҡыт үтә. Плугтарҙарҙы һәм прицепщиктарҙы үҙ ваҡытында килмәүҙәре, йәки орлоҡ булмау сәбәпле тракторҙар йыш ҡына 3-4-әр сәғәт тик торолайҙар. Былардан тыш, трактор сәскестәре лә ватылалар.

Бында сәғәт графигы буйынса эшләү ойошторолмаған. Көндәрҙең бушҡа әрәмгә үтеүе менән бында бер кем дә иҫәпләшмәй. Шуныһы ғәжәп, баҫыу эштәре аҡрын барыуға ҡарамаҫтан, бында массовый-политик эш йомшаҡ алып барыла. Ярышты ойоштороуға тейешле иғтибар ителмәй. Көндәлек эшкә йомғаҡ яһалмай, колхозсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһы түбән. Баҫыу эштәрендә көн һайын 500-ҙән артыҡ колхозсы ҡатнашырға тейеш. Ә фактик хәлдә уларҙың яртыһы ғына ҡатнаша. Баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары Хәйриасов һәм Басыров иптәштәр хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуға яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр.

Сәсеүҙең иң яҡшы агротехник сроктары көн һайын уҙа бара. Шәрип МТС-ы директоры иптәш Шәүипов колхоздарға конкрет ярҙам күрһәтәһе урында, үҙенең шәхси интересын күҙәтеп, Өфө юлын тапауҙан бушамай. Уның семьяһы Өфөлә тора. Директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Идрисов үҙенә йөкмәтелгән эшкә яуапһыҙ ҡарай. Бына ошолар һөҙөмтәһендә Шәрип МТС-ы зонаһындағы колхоздар артта ҡалалар. Яҙғы сәсеү планын 66 процентҡа ғына үтәгәндәр.

Райондың Туҡмаҡлы МТС-ында ла шундай уҡ хәл.

Район буйынса яҙғы сәсеү эштәренең бөгөнгө көнгә 83 процентҡа ғына үтәлеүе юғарыла әйтелгән етешһеҙлектәргә бәйле булып тора. Кушнаренко районы етәкселәре был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр. Яҙғы осорҙа ваҡыт менән иҫәпләшмәү— ул урожайҙың түбән булыуына алып барасаҡ. Юғары урожай үҫтереү буйынса Стәрлебаш районы менән ярышыуҙа Кушнаренко районы йөкләмәне аныҡ үтәргә тейеш.

Х. Йосопов.

ЭКОНОМИК БЕЛЕМДӘРЕН КҮТӘРЕҮСЕЛӘРГӘ ЯРҘАМҒА

СССР промышленносенең төп фондтары һәм производство ҡеүәттәре

Беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөүҙә иптәш Сталин тарафынан бирелгән бөйөк программаны бөтә совет халҡы үҙенең иң яҡын, туған эше итеп ҡабул итте. Большевиктәр партияһы, беҙҙең халҡыбыҙҙы коммунизмдең материаль-техник базаһын булдырыу өсөн ҙурлыҡ рухландырып һәм ойоштороп, совет индустрияһының үҫешен киңәйтелгән социалистик воспроизводство юлы буйынса юнәлтә.

Үҫә барған социалистик воспроизводство процесында СССР халҡ хужалығының төп һәм оборот фондтары йылдан-йыл үҫәләр. Промышленностең төп фондтары хеҙмәт ҡоралдарынан һәм средстволарынан тора. Бер етештереү циклында әҙер продуктҡа тотош күсә торған оборот фондтарынан (сырье, яғыулыҡ, электр энергияһы һәм башҡалар) айырмалы рәүештә төп фондтарҙың ҡиммәте әҙер продукттарға өлөшләтә, уларҙың туҙыуына ҡарап күсә. Төп фондтар — материаль байлыҡ тыуҙырыу өсөн кеше тарафынан файҙаланыла торған бөтә етештереү процесенең төп нигеҙе ул.

Капиталистик общество шарттарында етештереү средстволары төп капитал формаһын алалар һәм фабриканттар, банкирҙар тарафынан хеҙмәтсе массаларҙы эксплуатациялау ҡоралы булып торалар. Етештереүҙең бөтә средстволарын тиерлек үҙ ҡулдарына туплап, Морган, Рокфеллер, Меллон, Дюпон һәм башҡаларҙың финанс олигархиялары кеүек Американың реакцион финанс һәм промышленность монополиялары АҠШ-тың эшселәр синыфын аяуһыҙ эксплуатациялайҙар, миллионлаған ябай кешеләрҙең ҡаны һәм тире иҫәбенә миллиардлаған байлыҡ йыялар.

Социалистик обществола **общественный милк** тәшкил итеүсе етештереү средстволары массаларҙың материаль көн-күрешен күтәрелешенең ҡеүәтле сығанағы булып торалар, коммунистик төҙөлеш эшенә хеҙмәт итәләр. Капиталистик система алдында хужалыҡтың социалистик системаһының бөйөк өҫтөнлөктәре әнә шунда.

* * *

Төп фондтар етештереүҙә ҡатнашыу яғынан ике төргә бүленәләр. Беренселәренә, етештереү процесында тура-тура ҡатнашыусы йәки уны ғәмәлгә ашырыуға булышлыҡ итеүсе хеҙмәт ҡоралдары инәләр. Икенселәренә — торлаҡ фонды, клубтар, мәктәптәр һәм башҡалар инәләр.

Промышленность статистикаһында ҡабул ителгән классификация буйынса төп етештереү фондтары: биналарға, ҡоролмаларға, көс установкаларына, передаточный ҡоролмаларға, эш машиналарына һәм аппараттарға, инструменттарға, хужалыҡ инвентарена, транспортҡа бүленәләр.

Төп етештереү фондтарының дөйөм ҡиммәтендә айырым элементтарҙың күпләге промышленностең төрлө тармаҡтарында төрлөсә. Мәҫәлән, ҡаҙылма байлыҡтарҙы табыу тармаҡтарында (күмер, нефть табыу һәм башҡалар), шулай уҡ ҡара металлургияла төп фондтарҙың дөйөм ҡиммәтендә ҡоролмаларҙың удель ауырлығы ҙур, электр станцияларында — көс һәм передаточный установкаларҙың, химия промышленносендә — машиналарҙың һәм аппараттарҙың удель ауырлығы ҙур.

Промышленносте техника менән ҡоралландырыу, етештереү процестарын механизациялаштырыу, автоматлаштырыу һәм электрлаштереү, производствоға техник камиллашҡан машиналарҙы һәм механизмдарҙы индереү промышленностең төп етештереү фондтарының дөйөм ҡиммәтендә ҡоролмаларҙың, машиналарҙың һәм передаточный механизмдарҙың ҡиммәтенең удель ауырлығының тайпылышһыҙ үҫеүенә килтерәләр.

Һуғыштан алдағы 13 йыл эсендә (1927 йылдан алып 1940 йылға тиклем) СССР-ҙың эре промышленносендәге төп етештереү фондтарының ҡиммәтендә ҡоролмалар, машиналар һәм передаточный ҡоролмалар ҡиммәтенең удель ауырлығы 46 проценттан 52 процентҡа тиклем күтәрелде, ә производство биналары ҡиммәтенең удель ауырлығы 31 проценттан 29 процентҡа тиклем түбәнәйҙе.

Предприятиеларҙа хәҙерге машиналар, механизмдар һәм агрегаттар менән артабан техник ҡоралландырыу, производство майҙандарын яҡшыраҡ файҙаланыу төп етештереү фондтарының структураһын, уларҙың актив өлөшөнөң (машиналар, механизмдар һәм агрегаттар) удель ауырлығы артыу яғына табан тағы ла үҙгәртәсәк.

Сталинсе биш йыллыҡтар йылдарында яңы төҙөлөштөң бик ҙур программаһын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә эре промышленностең төп етештереү фондтары 1941 йыл башына, 1928 йыл менән сағыштырғанда, 9 тапҡыр үҫте. Шул уҡ ваҡытта ауыр промышленность тармаҡтарының төп етештереү фондтары 12 тапҡырҙан артыҡ, еңел промышленностең — 4,5 тапҡыр үҫтеләр. СССР-ҙың бөтә эре промышленносенең төп етештереү фондтары ҡиммәтендә ауыр промышленность тармаҡтарының төп фондтары ҡиммәтенең удель ауырлығы 1928 йылдағы 58 проценттан 1940 йылда 80 процентҡа тиклем етте.

Социалистик накоплениеның өтөҙ темптары һәм промышленносҙа бик ҙур капитал һалыу социалистик промышленностең производство аппаратын тамырынан уҡ яңыртырға мөмкинлек бирҙе. Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға яңы һәм тотош менән реконструкциялаштырылған промышленность предприятиеларенең төп фондтары ҡиммәтенең удель ауырлығы эре промышленностең төп етештереү фондтары ҡиммәтенең 90 проценте самаһын тәшкил итте.

Һуғыш йылдарында беҙҙә яңы фабрикалар һәм заводтар төҙөү ҡыҫҡармауы, ә, киреһенсә, уның йылдан-йыл үҫеүе социалистик экономиканың көсөнән бик гүзәл күрһәткесе булып тора. Һуғыш йылдарында ҡара һәм төҫлө металлургияла, электр станцияларында, машиналар төҙөлөшөндә, күмер, нефть һәм промышленностең башҡа тармаҡтарында яңы етештереү ҡеүәттәре тыуҙырылдылар һәм хәрәкәткә индерелделәр.

Дошман оккупацияһына дусар ителгән районларҙы аяҡҡа баҫтырыу эштәре уларҙы азат итеү менән уҡ башланды. Азат ителгән райондарҙың халҡ хужалығына ҙур капитал һалыу һөҙөмтәһендә был райондарҙа төп фондтар һуғыш аҙағына уҡ инде өстән бер өлөш самаһына аяҡҡа баҫтырылғайнылар.

Беҙҙең илебеҙ өсөн халҡ хужалығының бөтә тармаҡтарының етеҙ темптар менән үҫеше характерле. Промышленноста етештереүҙең һуғышҡа тиклемге кимәле аяҡҡа баҫтырылыу ғына түгел, бәлки уҙып та кителде.

Нефть промышленносендә эксплуатацияға бораулауҙа механизмдарҙы файҙаланыу буйынса һуғышҡа тиклемге техник-экономик күрһәткестәр 1947 йылда уҡ инде уҙып кителде, 1948 йылда ҡара металлургияла домна һәм мартен мейестәрен файҙаланыуҙың һуғышҡа тиклемге күрһәткестәр уҙып кителде. 1949 һәм 1950 йылдарҙа промышленностең бөтә тармаҡтарында производство ҡеүәттәрен һәм оборудованиеларҙы файҙаланыуҙы артабан яҡшыртыу барҙы. Шуның һөҙөмтәһендә хәҙерге ваҡытта домна мейестәре, һуғышҡа тиклемгегә ҡарағанда, 25 процентҡа, ә мартен мейестәре 32 процентҡа яҡшыраҡ файҙаланыла. Нефть скважиналарын эксплуатацияға бораулауҙа тиҙлек, һуғышҡа тиклемге менән сағыштырғанда, 43 процентҡа артты.

Һуғыш бөлгөнө менән аяҡҡа баҫтырыу һәм яңы төҙөлөш эштәренең масштабтары күп тапҡырҙар артты. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында халҡ хужалығына йөҙҙәрсә миллиард һум аҡса һалынды, государствоның ваҡ һәм кооператив предприятиеларын иҫәпләмәгәндә, 6000 самаһы промышленность предприятиеһе аяҡҡа баҫтырылды һәм хәрәкәткә индерелде, ҡалаларҙа һәм эшселәр поселкаларында 90 миллион квадрат метр самаһы торлаҡ майҙаны, ауыл ерҙәрендә 2,5 миллиондан артыҡ йорт аяҡҡа баҫтырылды һәм яңынан төҙөлдө.

1949 йылда халҡ хужалығына капитал һалыу күләме, һуғышҡа тиклемге 1940 йылға ҡарағанда, ике тапҡыр тиерлек артыҡ булды. Ҙур капиталь эштәрҙе ғәмәлгә ашырыу һөҙөмтәһендә хужалыҡтың бөтә тармаҡтары яңынан тыуҙырылды, немец-фашист илбаҫарҙарынан зарар күргән райондарҙа торлаҡ фонды нигеҙҙә аяҡҡа баҫтырылды. Көньяҡтың металлургия промышленносе яңы техник базала аяҡҡа баҫтырылды. Донбасстың күмер промышленносе яңынан тыуҙырылды. Майкоп һәм Грозный райондарының нефть промышленносе һәм Көнбайыш Украинаның нефть промышленносе тулыһынса аяҡҡа баҫтырылды һәм техник яҡтан ҡоралландырылды. Оккупацияға дусар ителгән райондарҙың промышленносе хәҙерге ваҡытта продукцияны, һуғышҡа тиклемгегә ҡарағанда, күберәк бирәләр. 1950 йылға халҡ хужалығында төп фондтар аяҡҡа баҫтырылып ҡына ҡалманылар, бәлки һуғышҡа тиклемге кимәлдә байтаҡ уҙып киттеләр.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта промышленность предприятиеларын аяҡҡа баҫтырыу һәм яңыларын төҙөү яңы техник базала үткәрелде. Аяҡҡа баҫтырыла торған һәм яңынан төҙөлә торған предприятиелар яңы техника, ныҡыраҡ камиллашҡан хеҙмәт ҡоралдары менән — машиналар, механизмдар, агрегаттар менән ҡоралландырылдылар, шуның һөҙөмтәһендә общественный хеҙмәттең етештереүсәнлеге сереҙә үҫте.

Беҙҙең ватан промышленносебеҙ тик һуңғы ике йыл эсендә генә юғары етештереүсәнле машиналарҙың һәм механизмдарҙың 700-ҙән артыҡ яңы тибын һәм маркаһын булдырҙы. Эре гидроэлектр станциялары һәм ҙур каналдар төҙөү өсөн, промышленностең күп хеҙмәт һалыуҙы талап итә торған тармаҡтарын артабан механизациялаштырыу һәм производство процестарын интенсивлаштереү өсөн яңы машиналар сығарылдылар.

Күмер промышленносендә күмер табыуҙы механизациялау тамамланды. Күмер ейеүҙә механизациялаштырылған эштәрҙең күләме, 1949 йылға ҡарағанда, 2,5 тапҡырға артты. Урман промышленносендә механизациялаштырылған эштәрҙең күләме, 1949 йыл менән сағыштырғанда, ағас әҙерләүҙә 1,5 тапҡырҙан артыҡ, ташыуҙа — 2,3 тапҡырға артты. Төҙөлештәге ер һәм бетон эштәрендә һәм тимер юл һәм һыу транспортында тейәү-бушатыу эштәрендә механизация үҫте.

Ҡара һәм төҫлө металлургияға камиллаштерелгән оборудованиеле һәм яңы производство технологияһын индереү дауам итте. Машиналар төҙөлөшөндә автоматик һәм конвейер ағым линиялары, төрлө автоматтар һәм ағым автоматтар производствоға тағы ла күберәк инделелә һәм технологик процестарҙың барышына контроль аһау өсөн приборҙар ҡулланыу байтаҡ киңәйтелде. Йылылыҡ һәм гидравлик электр станцияларында идара итеүҙе автоматизациялауҙы артабан индереү һәм шулай уҡ парҙың юғары баҫымында эшләүсе оборудованиеле индереү үткәрелде. Еңел промышленноста яңы, юғары етештереүсәнле машиналар һәм автоматик туҡыу станоктары индерелделәр.

* * *

Промышленностең төп фондтары натураль формала һәм ҡиммәте буйынса планлаштырылалар һәм иҫәпкә алыналар. Төп фондтарҙы натураль формала планлаштырыу һәм иҫәпкә алыу уларҙың ҡеүәттәрен, техник составын һәм туҙыу дәрәжәһен билдәләү өсөн кәрәк. Йыл һайын инвентаризация үткәреү, шулай уҡ айырым тармаҡтарҙа периодик рәүештә үткәрелә торған предприятиеларҙағе паспортизация былар өсөн төп мәғлүмәттәрҙе бирәләр.

Төп фондтарҙы ҡиммәте буйынса планлаштырыу һәм иҫәпкә алыу төп фондтарҙың балансын эшләү өсөн, төп фондтарҙың динамикаһын билдәләү өсөн, амортизацияның нормаһын һәм күләмен иҫәпләп сығарыу өсөн материал бирәләр. Төп фондтарҙың ҡиммәтен иҫәпкә алыу өсөн уларҙың хаҡының дөрөҫлөгө һәм бер төрлө булыуының әһәмиәте ҙур. Практикала төп фондтарҙың хаҡын билдәләүҙә түбәндәге төрҙәр ҡулланыла: Тәүге ҡиммәте буйынса, яңынан төҙөләү ҡиммәте буйынса, туҙыуҙы иҫәпкә алған ҡиммәте буйынса.

Төп фондтарҙы тәүге ҡиммәттәре буйынса иҫәпкә алыу төп фондтарҙы булдырыу һәм уларҙы хәрәкәткә индереү буйынса тотолған расходтарҙың дөйөм күләмен билдәләү өсөн кәрәк. Төп фондтарҙың туҙыуына ярашлы рәүештә продукттың ҡиммәтенә күсә торған төп фондтарҙың тәүге ҡиммәте амортизация отчисленелеренең күләмен билдәләү өсөн нигеҙ булып тора.

Төп фондтарҙың яңынан төҙөләү буйынса ҡиммәте тигәндән беҙ хәҙерге шарттарҙа уларҙың яңынан етештерелеү ҡиммәтен аңлайбыҙ. Төп фондтарҙы яңынан төҙәтелеү ҡиммәте буйынса иҫәпкә алыу төп фондтарҙың бер үк, ләкин төрлө ваҡытта тыуҙырылған элементтарын баһалауға бер төрлөлөк индерә һәм уларҙың натураль формаһын дөрөҫ сағылдыра.

Төп фондтарҙың ҡиммәте аҡрынлап әҙер продуктҡа күсеүе төп фондтарҙың амортизацияһын аңлата. Төп фондтарҙың туҙыуы уларҙы файҙаланыу процесында күберәк йәки аҙыраҡ осор эсендә була.

Төп фондтарҙы яңыртып тороу капиталь ремонт үткәреү һәм туҙған, производство процесенән сыҡҡандарға алмашҡа яңы фондтар булдырыу өсөн систематик рәүештә средство туплау кәрәклеген күҙҙә тота. Был накопление йыл һайын амортизация отчисленелере менән тәьмин ителә, ул әҙерләнә торған продукцияның ҡиммәтенә өҫтәлә. Амортизация отчисленеләренең суммаһы финанс системаһы аша капиталь ремонт үткәреү һәм яңы төҙөлөш өсөн хужалыҡ органдарына бирелә.

Беҙҙең промышленноста һуңғы ваҡытҡа тиклем хөкүмәт тарафынан 1938 йылда ҡуйылған амортизация нормалары йәшәп килделәр. Был нормалар төп фондтарҙы систематик рәүештә һаҡлап килеүҙе һәм нормаль яңыртыуҙы тәьмин иттеләр. 1949 йылда ауыр промышленность продукцияһына күпләп һатыу хаҡтары һәм йөк йөрөтөүгә тарифтарҙың үҙгәреүе сәбәпле хөкүмәт амортизацияның ваҡытлыса яңы нормаларын ҡабул итте. Был нормаларҙың ваҡытлыса характере шуның менән аңлатыла: яҡын ваҡыт эсендә хөкүмәттең ҡарары буйынса бөтә төп фондтарҙы яңынан баһалау үткәрелергә тейеш.

Социалистик хужалыҡта төп фондтарҙы яңынан етештереү дөйөм государство масштабында планлаштырыла һәм амортизацияның нормалары хеҙмәт средстволарының физик туҙыуының нормаль сроктарынан сығып ҡуйылалар. Капиталистик обществола амортизацияның нормаһы стихиялы рәүештә, файҙаның уртаса нормаһы йоғонтоһо аҫтында барлыҡҡа килә. Унда хеҙмәт средстволары, ҡағиҙә рәүешендә, уларҙың физик туҙыу срогынан элек ҡулланыуҙан сығалар. Был общественный хеҙмәтте бик ҙур юғалтыуҙы аңлата. Социалистик промышленноста производствоның төп фондтары бөтә үҫә барған эффективлек менән файҙаланылған ваҡытта, периодик емергес кризистарға дусар ителә торған капиталистик промышленность массовый эшһеҙлек менән оҙатыла торған хроник рәүештә тулыһынса эшләмәүҙән, төп капиталдың ваҡытынан элек ҡәҙерһеҙләнеүынан ҡотола алмай.

Социалистик промышленностең төп фондтарының етеҙ үҫеүе амортизация отчисленелере фондының тиҙ үҫеүе менән бергә бара, был отчислениелар хәрәкәт итеүсе төп фондтарға капиталь ремонт яһау һәм уларҙың туҙған частарын алмаштырыу өсөн файҙаланылалар.

Техниканың үҫеше һәм хеҙмәт ҡоралдарының систематик рәүештә камиллашыуға шуға килтерә: тупланған амортизация фонды, ҡағиҙә рәүешендә, эштән сыҡҡан хеҙмәт средстволары урынына камиллашҡанраҡ һәм етештереүсәнлерәк хеҙмәт средстволарын булдырыуҙы тәьмин итә. Шулай итеп, амортизация фонды ябайтаҡ воспроизводствоның ғына түгел, бәлки киңәйтелгән воспроизводствоның да сығанағы булып тора.

Беҙҙең промышленносебеҙҙә төп фондтар массаһының үҫеүе менән уларҙы нормаль хәлдә тотоу, уларға периодик ремонт үткәреү проблемаһы торған һайын ҙур әһәмиәт ала бара. Билдәле, төп фондтарҙы файҙаланыуҙың интенсивлеге һәм оҙайлығы уларҙы ҡарауҙың сифатына бик ныҡ бәйләнгән. Техника, завод оборудованиеһе — халҡ байлығы. Машиналарға һәм агрегаттарға вәхшиәрсә ҡарашы, механизмдарҙы һаҡһыҙ ҡарау беҙҙең социалистик хужалығыбыҙға ҙур зарар килтерә. Большевиктәр партияһы совет эшсәндәрен беҙҙең беренсе класлы техникаға һаҡлыҡ менән мөнәсәбәт итеү рухында, ҡиммәтле оборудованиене боҙоусы халтурщиктарға һәм брак яһаусыларға килешмәүсән булыу рухында тәрбиәләй.

* * *

Промышленностең төп етештереү фондтары производство процесының материаль шарты булып торалар. Эшсе көсө менән бергә төп фондтар предприятиеның етештереү ҡеүәтен билдәләйҙәр, йәки, икенсе төрлө әйткәндә, продукцияны максималь эшләп сығарыу мөмкинлеген билдәләйҙәр.

Предприятиеның етештереү ҡеүәте түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алып билдәләнә:

а) хәрәкәт итеүсе бер машинаны, механизмде, агрегатты эш ваҡытының берәмегендә максималь эшләтеү; б) предприятиела хәрәкәт итеүсе машиналарҙың, механизмдарҙың һәм агрегаттарҙың һаны; в) предприятиеның эшләү режиме (сәғәт һаны).

Машинаға эш биреү нормаһын дөрөҫ билдәләү өсөн уның техник һәм етештереү характеристикаһын иҫәпкә алыу менән бергә машинаны хеҙмәтләндереүсе эшсенең хеҙмәтен квалификациялау һәм уның етештереүсәнлеген иҫәпкә алыу ҙа бик мөһим.

Стахановсылар хәрәкәте барлыҡҡа килгәнгә тиклем йәшәгән техник нормаларҙы һәм оборудованиеларҙың проект ҡеүәттәрен билдәләү практикаһының сериоз етешһеҙлектәре бар ине, сөнки был практика машиналарҙы файҙаланыу кимәленә эшсенең йоғонтоһон иҫәпкә алмай ине.

Беҙҙең кадрҙарыбыҙҙың техник яҡтан үҫеүе, уларҙың производство квалификацияларының систематик артыуы, социалистик ярыштың киң ҡоласы техник нормаларҙың һәм проект ҡеүәттәрен билдәләүҙең йәшәп килгән методологияһының яраҡһыҙлығын һәм зарарлылығын күрһәттеләр.

Иптәш Сталин 1935 йылда стахановсыларҙың Беренсе Бөтә Союз кәңәшмәһендә һөйләгән телмәрендә иҫке техник нормаларҙың артта ҡалыуын күрһәтте һәм яңы нормалар билдәләү кәрәклеген әйтте.

«Хәҙерге техник нормалар, — тине иптәш Сталин, — ысынбарлыҡҡа ярашлы түгел инде, улар артта ҡалғандар һәм беҙҙең промышленносебеҙ өсөн тормозға әйләнгәндәр, ә беҙҙең промышленносебеҙгә тормоз яһамаҫ өсөн уларҙы яңы, юғарыраҡ техник нормалар менән алмаштырырға кәрәк» («Ленинизм мәсьәләләре», Башгосиздат, 11-се баҫма, 533-сө бит).

Иптәш Сталиндең күрһәтмәләренән һәм стахановсылар хәрәкәте тәжрибәһенән сығып, ВКП(б) Үҙәк Комитетының декабрь пленумы (1935 йыл) предприятиеларҙың оборудованиеларен һәм етештереү ҡеүәттәрен файҙаланыуҙың техник нормаларын, уларҙы арттырыу яғына табан яңынан ҡарау тураһында директива бирҙе. Был директивала хәҙерге техникаға эйә булған алдынғы эшсегә ориентация тотоу бик ныҡ әйтелде. ВКП(б) Үҙәк Комитетының декабрь пленумы техник нормаларҙы һәм етештереү ҡеүәттәрен иҫәпләгәндә урта күрһәткестәрҙән түгел, ә алдынғы стахановсылар тәжрибәһенән сығып эш итергә тәҡдим итте. Был хәлдә айырым һәм осраҡлы рекордтар түгел, ә тәжрибә менән һыналған тотороҡло алдынғы эш күрһәткестәре күҙҙә тотолдо.

Большевиктәр партияһы беҙҙең етәксе кадрҙарыбыҙҙы, алдынғы тәжрибә нигеҙендә билдәләнгән техник нормалар һәм етештереү ҡеүәттәре үҙгәрмәй ҡала алмайҙар, тип өйрәтә. Социалистик ярыш, техниканың прогресс, технологик процестарҙы камиллаштереү производствоны һәм хеҙмәтте ойоштороу һөҙөмтәһендә алдынғы тәжрибәнең үҫеше техник нормаларҙы һәм етештереү ҡеүәттәрен, уларҙы арттырыу яғына табан систематик рәүештә ҡайтанан ҡарауға шарт тыуҙыра һәм шуны диктовать итә.

Хәҙерге ваҡытта беҙҙең промышленносебеҙҙә ҡеүәттәрҙе файҙаланыуҙың фактик коэффициенте 100 проценттан артып киткән предприятиелар бар инде.

Был, беренсенән, етештереү ҡеүәттәрен һуғыштан һуң үҙләштереүҙәге уңыштар тураһында, ә икенсенән, күп кенә предприятиеларҙың элек билдәләнгән ҡеүәттәренең ҡайтанан ҡарауға мохтаж булыуҙары тураһында һөйләй.

Техник нормалар һәм етештереү ҡеүәттәре планлаштырыуҙа прогрессив роль уйнарға, үҫеүгә перспектива бирергә, продукция эшләп сығарыуҙы арттырыу өсөн предприятиеның эске резервтарын күрһәтергә тейештәр. Ә быға улар алдынғы тәжрибәгә таянған ваҡытта ғына яуап бирә алалар.

Үҙенең үҫешендә туҡтап ҡалған предприятие беҙҙең промышленносебеҙҙә юҡ. Предприятиелар яңы корпустар төҙөү, яңы оборудованиелар ҡуйыу, ярҙамсы производстволарҙы киңәйтеү һөҙөмтәһендә үҫәләр. Шуның менән бер үк ваҡытта хәрәкәт итеүсе машиналар һәм агрегаттар модернизациялана, технологик процестар камиллаша, производствоны һәм хеҙмәтте ойоштороу яҡшыра бара, квалификация үҫә, эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелә. Былар бөтәһе лә беҙҙең социалистик промышленносебеҙҙең етештереү ҡеүәттәрен арттырыуға килтерә.

Предприятиеларҙың етештереү мөмкинлектәрен тулыһынса иҫәпкә алыуға уларҙың етештереү ҡеүәттәренең баланстары хеҙмәт итәләр. Был баланстарҙа түбәндәгеләр иҫәпкә алына: а) планлаштырылған осорҙың башына булған бөтә ҡеүәттәр; б) капиталь төҙөлөш иҫәбенә яңы ҡеүәттәрҙе хәрәкәткә индереү; в) технологик процестарҙы камиллаштереү һөҙөмтәһендә хәрәкәт итеүсе предприятиеларҙың ҡеүәттәрен киңәйтеү; г) төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡеүәттәрҙең эштән сығыуы.

Промышленностең күпселек тармаҡтарында предприятиеларҙың етештереү ҡеүәттәре йыллыҡ продукция эшләп сығарыу менән иҫәпләп сығарыла. Айырым тармаҡтарҙа етештереү ҡеүәтен үлсәүсе итеп тәүлектә эшләп сығарған продукция йәки тәүлектә эшкәртелгән сырье алына.

* * *

Етештереү ҡеүәте билдәләнгәндән һуң планлаштырыу бурысы производство программаһын продукция эшләп сығарыуҙы һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген систематик арттырыуҙы тәьмин итә торған техник-экономик нормалар менән нигеҙләүҙән тора.

Техник-экономик норма предприятиеның етештереү программаһын иҫәпкә алыуҙың нигеҙе булып тора. Производство планының дөрөҫ төҙөлөүе техник-экономик норманың дөрөҫ билдәләнелеүенә бәйләнгән. Шуға күрә техник-экономик нормаларҙы билдәләү алдынғы тәжрибәне систематик һәм һәр яҡлап өйрәнеүҙе һәм уны киң рәүештә дөйөмләштереүҙе талап итә.

Предприятиеларҙың коллективтарын производствоның эске резервтарын файҙаланыуҙы яҡшыртыу өсөн, государство пландарын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн мобилизациялау маҡсаттарында хөкүмәт «1947 йылда СССР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең государство планы тураһында»ғы ҡарарында министерстволарҙы һәм ведомстволарҙы предприятиеларҙа машиналарҙы, механизмдарҙы һәм агрегаттарҙы файҙаланыуҙың алдынғы техник-экономик нормаларын, шулай уҡ яғыулыҡты, энергияны, материалдарҙы һәм сырьены тотоноу нормаларын индереү буйынса эште ойошторорға мәжбүр итте.

Алдынғы предприятиеларҙың эш тәжрибәһе шуны күрһәтә: оборудованиеларҙы күберәк етештереүсәнле файҙаланыу өсөн промышленностең бөтә тармаҡтарында ла тағы ла ҙурыраҡ резервтар һәм мөмкинлектәр бар.

Промышленность работниктарының айырыуса һуңғы йылдарҙа киң йәйелдерелгән социалистик ярышы производствоны үҫтереү, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, промышленностең бөтә тармаҡтарының күтәрелешенең темптарын тиҙләтеү өсөн яңынан-яңы резервтарҙы аса.

Николай Российскийҙең, Александр Чуткихтең, Мария Рожневаның, Лидия Кононенконың, Павел Быковтың, Генрих Борткевичтең, Лидия Корабельникованың, Федор Кузнецовтың, Нина Назарованың һәм производствоның башҡа бик күп данлы новаторҙарының бик гүзәл уңыштары хәҙерге предприятиеларҙың ҡатмарлы техникаһын бик һәйбәт белеүгә һәм яҡшы файҙаланыуға нигеҙләнгәндәр. Улар социалистик производствоның яңынан-яңы эске резервтарын, хәҙерге техниканы етештереү ҡоралдарын һәм средстволарын яҡшыраҡ файҙаланыу резервтарын асалар.

Хәҙер беҙҙең промышленносебеҙҙә производство процесын коллектив стахановсы эш принцибы буйынса ғәмәлгә ашырыусы йөҙәрләгән производство участкалары һәм цехтары бар. Тотош стахановсы предприятиелар ҙа бар.

Хәҙерге шарттарҙа беҙҙең бөтә предприятиеларебеҙҙә алдынғы тәжрибәне өйрәнеү һәм бөтә саралар менән таратыу проблемаһы бөтә киҫкенлеге менән килеп баҫа. Был өлкәлә инженер, хәҙер «Пролетарская победа» йөкә бусҡау фабрикаһы директоры Ф. Ковалевтың методын производствоға индереү ҙур әһәмиәткә эйә. Уның методының асылы, һәр бер стахановсынан уның күберәк етештереүсәнле алымдарын алыу, уларҙы дөйөмләштереү һәм уны производствоға массовый индереүҙе ойоштороуҙан тора.

Инженер Ковалевтың методын уңышлы ҡулланыу стахановсы эштең алдынғы тәжрибәһен халҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында киңерәк һәм файҙалыраҡ индереүгә, хеҙмәт етештереүсәнлегенең артабан ҡеүәтле күтәрелешенә, хәрәкәт итеүсе предприятиеларҙа етештереү средстволарын яҡшыраҡ файҙаланыу өсөн яңынан-яңы резервтар табыуға ярҙам итәсәк.

* * *

Төп фондтарҙы бөтә саралар менән арттырыу коммунизмдең материаль-техник базаһын булдырыуҙың хәл иткес шарттарының береһе булып тора. Совет халҡы большевиктәр партияһы етәкселегендә, бөйөк Сталин юлбашсылығында коммунизм ҡоролмаларын төҙөү буйынса грандиоз эш йәйелдерә. Бик ҙур күләмдәрҙә булған был ҡоролмаларҙы тормошҡа уңышлы ашырыу беҙҙең промышленносебеҙҙең етештереү ҡеүәттәрен арттырып, коммунизмдең ныҡлы экономик нигеҙен булдырыр.

П. Иванов.

Сик буйы участкалар... алмашыу тураһында... Советтәр Союзы мен... Польша Республика... араһында Договор тө...

Польша Республикаһының ... күптән түгел СССР Хөкүмәтен... территорияһының ҙур булмаған си... участкаһын СССР территорияһын... лай уҡ күләмдәге сик буйы участ... алмаштырыуҙы һорап мөрәжәғәт... сөнки был участкаларҙын ССР... Польшаның үҙҙәренә сиктәш рай... экономик бәйләнештәре бар. СССР... мәте Польша Республикаһы Хөкү... тәҡдиме менән риза булды.

Мәскәүҙә булып үткән Совет-П... һөйләшеүҙәре һөҙөмтәһендә Ук... ССР-ының Дрогобыч өлкәһендә... Польша республикаһының Люблин... водствоһындағы районда государство... риторияларының сик буйы участ... алмашыу тураһында Договорға ҡул ... йылды.

Договорға ҡул ҡуйҙылар: ССР ... нан — СССР сит ил эштәре М... А. Я. Вышинский һәм Польша Ре... каһынан — Польша Республикаһы ... нистрҙар Советы Председателенең ... баҫары А. Завадский.

Халҡты кино менән хеҙмәтләндереү эше... артабан күтәреү өсө...

Ошо йылдың ғинуарынан башла... беленә тиклем иң яҡшы киноо... күсмә киноларға, профсоюз киноуст... ларына, район кинофикация бүлект... киноремонт мастерскойҙарына, шулай... «Главкинопрокаттың» бүлектәре... фильм базаларына Бөтә Союз смотры... гарылды.

«Главкинопрокаттың» Башҡорт... контораһы коллективы, Өфө фильм ... һәм район кинофикация бүлектәре ба... тырға ҡушылып, республикабыҙҙың ... сәндәрен кино менән хеҙмәтләндереү... яҡшыртыу буйынса байтаҡ ҡына ... үткәрҙеләр.

Алынған йөкләмәләрҙе үтәү ... «Главкинопрокаттың» Башҡортостан... тораһының монтаж мастерскойы ... ницалары кинофильмдарҙың һәр ба... ниһын ентекләп тикшерә ... лар һәм үҙ эштәренең сифат... фильмде экранда күрһәтеүсе ... никтәр аша күҙәтә торған... түбәндәгеса ойошторолдо. Улар ... фильм менән бергә киномеханиктар... рәүешендә отличная сифат бригадаһ... листоктарын һалалар, ә киномеханик... фильмде алыу менән уны тикшер... һуң листокҡа үҙҙәренең фекерҙәрен ... уны кире ебәрәләр. Шулай итеп, ... тығыҙ бәйләнеш урынлаштырылды. ... был бәйләнеш күп кенә етешһеҙлектәр... бөтөрөргә ярҙам итте, эштә ҙур аҙ... тыуҙырҙы. Нәтижәлә смотр осоро... листок «отлично» билдәһе менән ... Монтажниктарҙың өс кешенән тор... личная сифат бригадаһы смотр ... отличная сифат цехына әйләнде. ... браковщик вазифаһын ҡыҫҡартырға ... һайын 400 һум аҡсаға экономия ... мөмкинлек бирҙе.

1950 йылда кинофабриканан ал... фильмдәрҙең копиялары систематик ти... релмәү һәм яҡшы һаҡланмау арҡа... ҡаһы бер етешһеҙлектәргә ил түбә... килде. Смотр осоронда был ... ҡырҡа бөтөрөлдө. Экранға сығарыла... кинофильмдарҙың сифаты яҡшырты... киноустановкалар өсөн дә репертуа... расписание төҙәләүе, уларға киномех... ларҙың планлы рәүештә ебәрелеп ... һәм реклама аша иғлан итеү ... йөшле юғарылыҡҡа ҡуйылыуы киң х... массаһын кино менән хеҙмәтлә... эшендә яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. ... йылдың беренсе кварталында прокат ... аҡса йыйыу планы 107,5 проц... үтәлде.

Смотр осоронда «Главкинопрокат... Бөрө район-ара бүлеге, Октябрьский ... һәм Өфө группаһы айырыуса яҡшы ... пеләр. Май алды социалистик ярыш... смотр һөҙөмтәһендә Бөрө район-ара бү... күсмә Ҡыҙыл Байраҡ тапшырылды. ... циалистик ярыштың алдынғылары ... тәжнисалар Ленькова, Макаренко, ... Ильина, «Главкинопрокаттың» Баш... тан конторҙаһының эшсе һәм хеҙмәтс... Эмирова, Чернова, Сырцова, Ямал... киномеханик Янбарисов һәм башҡа ... тәр Почет таҡтаһына индерелделәр.

Яҡшы ғына уңышлыҡтарға ҡа... ҡарамаҫтан, кинопрокат ойошма... байтаҡ ҡына етешһеҙлектәр ҙа бар... Мәҫәлән, прокаттың Ҡыйғы район-ар... леге (директоры иптәш Ғәмиров) ... квартал планын һәм смотрҙың шарт... үтәмәне. Баймаҡ һәм Черниковск рай... бүлектәрендә лә эш насар тора.

Район бүлектәренең директорҙары... механиктары киноустановкаларҙың т... насар һәм аҙ тикшерәләр. Тере... аппараттарҙа эшләү арҡаһында кино... дар боҙола һәм срогынан алда браков... га китә. Шулай уҡ ҡайһы бер рай... репертуарный расписаниелар ... шарттарҙан сығып төҙәлмәйҙәр, ... һәтеү план менән алып барылмай. ... тановкалар һәм күсмә кинолар өҫтөн... троль тейешле юғарылыҡҡа ҡуйылма...

Бинәсәкта «Главкинопрокаттың» ... малары быға тиклем йәшәп килгән ... лектәрҙе йылдам бөтөрөргә, смотр ... тында ирешелгән уңышлыҡтарҙы ны... та, алдынғыларҙың тәжрибәләрен ... ларға таратырға һәм киң халҡ ... кино менән хеҙмәтләндереүҙе арта... шыртырға тейештәр. Ғ. Ғәм...

«Главкинопрокаттың» Башҡорт... конторҙаһы управляющийы.

ЮЛ ТӨҘӨҮ АЙЛЫҒЫ

Планды срогынан алда үтәйәсәкбеҙ

Ауыл хужалығы эштәрен механизациялаштырыу, техниканың артыуы һәм эш темпының күтәрелеүе районда яҡшы юлдар һәм төҙөк күперҙәр булыуын талап итә. Шуның өсөн дә беҙ юл төҙөү эшен сезонлы эш итеп кенә ҡарамайбыҙ. Уны йыл әйләнәһенә алып барабыҙ. Һәр йыл беҙ государство планын арттырып үтәйбеҙ. Быйыл БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты юл ремонтлау буйынса республикала айлыҡ иғлан иткәс тә, Мишкә район Советы исполкомы һәм ВКП(б) райкомы, эш пландары төҙөп, колхоздарға, ауыл Советтарына еткерҙе, механика, йәнле тартыу һәм эшсе көстәрен файҙаланыу буйынса конкрет график төҙөнө. Эш планы буйынса беҙҙең район хеҙмәтсәндәре был айлыҡта 11 мең кубометр ер эштәре башҡарырға, 4 мең кубометр ҡырсын таш, 100 кубометр ағас әҙерләргә һәм ташырға тейештәр.

Юл төҙөү айлығы районда ойошҡан рәүештә башланды. Был эшкә бөтә колхоздар ҙа йәлеп ителделәр. Айлыҡтың тәүге көндәрендә үк Чурай һәм Баймурҙин ауыл Советтары ҙур ойошҡанлыҡ күрһәттеләр. Унда Ленин, Чапаев, Суворов исемендәге колхоздарҙан эшкә 70 — 80-шәр кеше һәм 30 — 40-ар ат сыға. Бөтә колхозсылар ҙа эш заданиеларын арттырып үтәйҙәр.

Беҙҙең районда эскә мөмкинлектәре ҙур. Уларҙы уңышлы ҡулланып, государство планын быйыл да срогынан элек арттырып үтәйәсәкбеҙ. Һәм яңы урожай йыйнау кампанияһы башланғанға тиклем районда төҙөк юлдар һәм күперҙәр булдырасаҡбыҙ.

З. Гадеев,
Мишкә район Советы исполкомы председателенең урынбаҫары.

ЮЛДАР ТӨҘӨКЛӘНДЕРЕЛӘ

Дыуан. (Телефон аша). Райондың «Урал», «Ударник», Ленин һәм Сталин исемендәге ауыл хужалығы артелдәре юл төҙөү айлығына берҙәм ҡушылдылар. Был колхоздарҙың членары үҙҙәренә беркетелгән участкалағы юлдарҙы һәм күперҙәрҙе төҙөкләндереү эшен тамамланылар.

Хәҙер Мәтәле — Ярославка — Рухтин — Дүшәмбикә юлы автомашиналар менән еңел үтерлек итеп ремонтланды һәм был 100 километрҙан артыҡ араланы бөтә күперҙәр ҙә төҙөкләндерелде. Район юл төҙөү бүлегенең мастеры иптәш Сынников үҙ эшен намыҫ менән башҡара. Хәҙер иптәш Санников Суханка йылғаһы аша ҙур күпер һалыу эше менән етәкселек итә. Юл айлығында район территорияһындағы бөтә юлдар һәм күперҙәр ҙә төҙөкләндерелеп бөтәсәк. Юл төҙөү эшендә йөҙәрләгән колхозсылар, 30 ат һәм өс автомашина эшләй.

Социалистик ярыш йәйелдерелдә

Ҡыйғы районы колхоздары юл төҙөү һәм ремонтлау айлығын быйыл ҙур ойошҡанлыҡ менән башланылар. Юл төҙөү графигы һәм планы алдан уҡ төҙөлөп, ул бөтә ауыл Советтарына һәм колхоздарға еткерелде.

Юл төҙөү эшендә ҙур ғына уңыштарға өлгәшкән Ленин исемендәге, «Красный партизан» һәм башҡа колхоздарҙа социалистик ярыш бөтә бригадалар араһында ла киң йәйелдерелде.

Колхозсылар яңы урожай йыйнау кампанияһын районда төҙөк юлдар һәм күперҙәр булдырыу менән ҡаршылау өсөн күтәренке хеҙмәт етештереүсәнлегендә эшләйҙәр.

Колхоздарҙа тәжрибә эштәрен киң йәйелдерәйек!

Беҙҙең республикабыҙҙың колхоз һәм МТС-тарында ауыл хужалығы алдынғыларының, новаторҙарының һаны йылдан-йыл арта бара.

Башҡортостанда үҙған йылды юғары урожай үҫтереп алыусы бригадаларҙың һаны, 1948 йыл менән сағыштырғанда, 4,5 тапҡырға, 1949 йыл менән сағыштырғанда, 8 тапҡырға күберәк булды. Уртаса һәр бер алдынғы бригадаға төшкән юғары урожай участкаһының майҙаны, күрһәткән йылдар менән сағыштырғанда, 10—12 тапҡырға артты.

Колхоз новаторҙары писек итеп юғары урожай үҫтереп алырға, тигән һорауға үҙҙәренең практик эштәре менән яуап бирҙәләр.

Новаторҙар үҙҙәренең эш принциптәре менән ике төркөм төшкил итәләр. Бер төркөм новаторҙар — бригадирҙар ҙур майҙандарҙа агротехника комплексын ҡулланып, юғары урожай үҫтереү менән шөғөлләнәләр. Ә икенсе төркөм новаторҙар тәжрибәләр үткәреү юлы менән урожайҙы күтәреүҙең методтарын өйрәнәләр, фәндең яңылыҡтарын үҙләштереп, бригадаларҙа уларҙы дөрөҫ ҡулланыу юлдарын әҙерләйҙәр. Был һуңғы төркөм новаторҙарҙы халыҡ телендә тәжрибәсе-мичуринселәр тип атайҙар. Ләкин күрһәтеп үткән һәр ике төркөм новаторҙар ҙа бер үк изге бурысты — илебеҙҙә ауыл хужалығы продукттары муллығын тәьмин итеү өҫтөндә эш ҡоралар.

Республикабыҙҙың тәжрибәсе-мичуринселәре үҙған йыл айырыуса ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Улар үләп баҫыуы сәсеү системаһын һәр колхоздың үҙ шарттарында нисек итеп дөрөҫ үҙләштереү, фәндең теге йәки был уңыштарын нисек ҡулланыу кеүек мөһим бурыстарҙы хәл итәләр һәм тәжрибәләр үткәреү аша яңы методтар табалар.

Шаран районы «Сән» колхозының данлыҡлы тәжрибәсеһе-мичуринсе иптәш Сәләхов үҙған йылды колхоз баҫыуҙарында 8 төрлө тәжрибә уҙғарҙы. Ул яҙғы бойҙайҙы көҙҙән сәсеү методын ҡулланып, мәшәҡәт ауырыуын тамам юҡ итеү мөмкинлеген асып бирҙе һәм һәр бер гектарҙан 18-әр центнер урожай үҫтереп алды. Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының тәжрибәсеһе иптәш Кузнецов тәжелешендә 50 процент май тәшкил иткән Абессин крамбеһе тигән яңы культураны үҫтереүҙе үҙләштерҙе. Күп йыллыҡ арыш, ҡаты бойҙай кеүек ҡиммәтле культураларҙы үҙләштереү өҫтөндә уңышлы эш алып бара. Йомағужа районы Максим Горький исемендәге колхозда агроном иптәш Егошин бойҙайҙы гранулалы ашлама менән өҫтәмә ашлыҡландырып, һәр бер гектарҙан 3 центнерҙан артыҡ өҫтәмә урожай алды.

СССР Министрҙар Советының үҙған йылғы июнь айындағы күрһәтмәһе буйынса хәҙер колхоздарҙа төҙөлә торған ауыл хужалығы культура йорттары тәжрибә эштәренең үҙәге булырға тейештәр. Эрелетелгән колхоздарҙа был йорттарҙа эшләүгә тәжрибәсе колхозсыларҙы бүлеү тәҡдим ителә.

Колхоздарҙа тәжрибә эштәре производство әһәмиәтенә эйә булып торалар. Шуға күрә тәжрибә үткәреү өсөн бригада участкаларында бертекле ашлыҡтар өсөн кәмендә 10 гектар, ә күп хеҙмәт талап итә торған культуралар буйынса бер гектар майҙан бүленергә тейеш.

Фәндең әле колхоз производствоһында һыналып ҡаралмаған яңылыҡтарын өйрәнеү, яңы сорттар сығарыу өҫтөндә эш күреү кеүек тәжрибәләр үткәреү өсөн бынан тыш ауыл хужалығы культура йортона 5 — 10 гектар майҙанда айырым тәжрибә участкаһы булдырыла. Был участкаларҙа өлгө рәүешендә үләп баҫыулы сәсеү әйләнешен үҙләштереү шарт итеп ҡуйыла.

Айырым тәжрибәсе-мичуринселәр бер үк ваҡытта күп төрлө темаларға тәжрибәләр үткәреү менән мауығалар. Быны һөҙөмтәһендә улар методиканы дөрөҫ ҡулланып, тәжрибә участкаларында күҙәтеүҙе тулы алып бара алмайҙар. Был практикаға артабан юл ҡуйылырға тейеш түгел. Һәр бер тәжрибәсе йыл һайын 5 — 6 төрлө генә тәжрибә үткәрергә һәм уларҙың яҡшы һөҙөмтә биреүенә өлгәшергә тейештәр.

Үҙған йылды республикабыҙҙың колхоздарында үткәрелгән тәжрибәләрҙең 35 — 40 проценте һуңғы һөҙөмтәгә тиклем еткерелмәне. Сөнки ҡайһы бер колхоз етәкселәре был өлкәлә тәжрибәселәргә һәр яҡлап ярҙам күрһәтеү урынына, был эшкә үҙҙәре ҡамасаулыҡ яһанылар. Мәҫәлән, Өфө районы «Красный путь» колхозының тәжрибәсеһе иптәш Юшков 1948 йылда Башҡортостан баҫыусылыҡ ғилми-тикшеренеү станцияһы ҡаршыһындағы мичуринселәр курсын тамамланы һәм юғары урожай биреүсе яңы сорт арыш булдырыу өҫтөндә уңышлы эш алып барҙы. Ләкин уның республика әһәмиәтенә эйә булып торған был эшен тамамларға мөмкинлек бирмәнеләр. Иптәш Юшковты тәжрибә эшенән алып, малсылыҡ фермаһына эшкә күсерҙеләр. Бындай хәл башҡа колхоздарҙа ла урын алып тора. Быға артабан юл ҡуйырға ярамай. Тәжрибәсе-новаторҙарға һәр яҡлап ярҙам күрһәтеүҙе, уларға шарттар тыуҙырыуҙы тәьмин итергә кәрәк.

Тәжрибә эштәренең тематик планы һәм методтары айырым китап итеп яҡын көндәрҙә баҫтырып сығарыласаҡ һәм яҙғы сәсеүҙән һуң мичуринселәр өсөн тәжрибә баҫыуҙары эргәһендә курстар уҙғарыласаҡ.

Сәсеү орлоҡтарының сортын яҡшыртыу, юғары урожайлы яңы сорттар булдырыу һәм орлоҡсолоҡ участкаларында юғары агротехника ҡулланыу тәжрибәсе-новаторҙарҙың иң мөһим бурыстары булып тора. Киләсәктә үҫемлектәрҙе ашлауҙың системаһын өйрәнеүгә, уны производствола киң ҡулланыуға, гранул ашламаларҙы индереү бурыстарын хәл итеүгә тәжрибәселәр тарафынан айырыуса ҙур әһәмиәт биреү талап ителә.

Хәҙер, колхоз баҫыуҙарында массовый сәсеү барған ваҡытта, тәжрибәселәр фәндең яңылыҡтарын һәм алдынғы тәжрибәләрҙе производствоға индереү буйынса бригадаларға көндәлек практик ярҙам күрһәтергә бурыслылар.

Бөртөклө ашлыҡтарҙы арҡыры-буй ысулда сәсеү, ашламаларҙы гранул рәүештә файҙаланыу, көнбағыш һәм картофты оялап ултыртыу кеүек урожайҙы күтәреүгә тәьсире ғәйәт ҙур булған яңылыҡтарҙы колхоз баҫыуҙарында киң ҡулланырға кәрәк. Шуға күрә беҙҙең новаторҙарыбыҙҙан был өлкәлә инициатива күрһәтеү талап ителә.

Ә. Әхмәров,
Башҡортостан ғилми-тикшеренеү баҫыусылыҡ станцияһының ғилми сотруднигы.

Урман полосаларын тәрбиәләйҙәр

⁂ Саҡмағош районы «Трактор» колхозы быйыл яҙ 9 гектар урынына 10 гектар майҙанда ағас ултыртты. Иптәш Гәрәева звеноһы хәҙер баҫыу һаҡлаусы урман полосаларын тәрбиәләй.

Ғ. Насиров.

Йәш шағир Карам Бакиров шиғырҙары

Беренсе башлап Карам Бакиров шиғырҙар менән, бынан ике-өс йыл элек, «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы биттәрендә сығыш яһаны. Уның тәүге әҫәрҙәре көндәлек ваҡиғаларға шиғри отклик — политик лирика характерында инеләр. Ләкин йәш шағир, әҙәби оҫталыҡҡа ирешеү өсөн туҡтауһыҙ ынтылыу арҡаһында, һиҙелерлек үҫте: тематикаһы киңәйҙе, поэтик фекерләүе, тойғолары тулылана бара.

Бөгөн газетала иптәш Карам Бакировтың яңы шиғырҙар циклы бирелә. Ул шиғырҙар Тыуған илгә мәхәббәт йырлау, тыныслыҡ өсөн көрәшкә саҡырыу тойғолары менән һуғарылғандар. Шул уҡ ваҡыт был цикл йәш шағирҙың үҫә, өлгөрә барғанлығын да күрһәтә.

ТЫУҒАН ИЛ

(Иҙел көйөнә)

Иҙел бит ул, матур бит ул,
Иҙел бит ул, киң бит ул,
Иҙелгә шул йәмде биргән
Беҙҙең Тыуған ил бит ул.

Илем бит ул, гөлөм бит ул,
Шатлыҡлы көнөм бит ул,
Саф мәхәббәт тәме татып
Яратҡан ерем бит ул.

Илем бит ул, бик киң бит ул,
Йылы яҙға тиң бит ул,
Йырлар йырым, уйлар уйым
Ой Тыуған ил, һин бит ул.

Иҙел бит ул, бөрөләнып
Аға ла китә бит ул,
Илен һөйһә, кешене шул
Бәхетле итә бит ул.

ҺӘЙКӘЛ АСҠАНДА

Шәүләй япраҡ ярған аҡ ҡайындар,
Гөлләр үҫә яҙға наҙланып,
Ләкин улар бөгөн аҙ ғына ла
Хистәремде бәйләй алманы.
Ярһып көтәм һәйкәл асылғанын,
Әллә ваҡыт оҙаҡ үтәме,
Инде был сәғәттең һәр секундын
Үҙ йөрәгем менән күтәрҙем.
Елдәр аса ҡара брезентте,
Күренеп ҡала Саша ҡулдары,
Юҡ, юҡ, елдәр түгел, шулай түҙмәй,
Ул сабырһыҙ минең уйҙарым.
Ҡапыл көслә залп бер-бер артлы
Баһадирҙе тәбрик иттеләр.
Бына Матросов. Гүйә уны
Ҡайындар ҙа әйелеп үптеләр.
Елберҙәне сбаҡ ал байраҡтар,
Янғыраны ура тауышы,
Был еңеүсе, был үлемһеҙ ура
Чернушкиҙән беҙгә таныш ул.
Саша, Саша, бөйөк рус улы,
Яҡташыбыҙ, Иҙел егете.
Ҡашын йыйырып алыҫтарға ҡарай
Батыр, ҙур йөрәген еҡкетеп.
Сөнки Чернушкиҙә тәне менән
Ул һүндергән дошман уттары,
Бөгөн тағы Аҡ йорт тәҙрәһенән
Кореяға ҡарап уҡталды.
Үҙе баҫып торған йәшел баҡса
Тоҡанмаһын өсөн шул утҡа,
Автоматын тотоп һаҡта тора
Халҡым ижад иткән минутта.

ЙӘЙГЕ ТАҢ

Таң яҡтыһы керпек ҡаҡты, —
Көнгә нурҙар һибелде.
Тауға баҫып ҡарап торам
Матурлығын илемдең.
Томан пәрҙәләре аша
Һиҙҙермәй һалмаҡ ҡына,
Күңелдәге шатлыҡ кеүек
Йәш урмандар ҡалҡына.
Йомшаҡ елдәр ҡосағында
Аңҡый саскә еҫтәре,
Шул ваҡытта ҡанатлана
Дәртле йөрәк хистәре.
Ҡараштарын ергә төбәп
Уянғанда йәйге таң.
Алһыу офоҡтарға ҡарап
Уйланырға яратам.
Ана, унда мин уҡыған
Бөйөк мәктәп күренә,
Шунда инеп бара кеүек
Бала сағым бөгөн дә.
Ана, беҙ сәскәләр йыйған
Ҡубәләкле болондар,
Ана, таҫма төҫлө ята
Бәхеткә илткән юлдар.
Таң яҡтыһы керпек ҡаҡты
Көнгә нурҙар һибелде,
Ғашиҡ булып ҡарап торам
Башланасаҡ көнөмдө.

Йәшлек йыры

Алтын тамыр төҫлө булып
Һуҙылды ҡош юлдары.
Күктә йондоҙ тәлгәштәрҙең
Ем-ем итә нурҙары.

Сирендәрҙең зәңгәр шәлен
Бөркәнгән сағы,
Шул сирендәр баҡсаһына
Индек беҙ тағы.

— Уйнап ебәр гармоныңды
Бер йырлайыҡ, тинеләр,
Әллә дуҫтар, әллә йырҙар
Яңы дәрттәр бирҙеләр.

Һандуғастар сут-сут һайрап
Шиммә һыуын оҙата,
Иркәләнһен өсөн хистәр
Гармоныма уйнатам.

Бар тәбиғәт ойоп йоҡлай
Тыныс ял итә,
Беҙ йоҡоһоҙ, сөнки беҙҙе
Йәшлек елкетә.

Шулай ярһыу һәм тынғыһыҙ
Булғас ул күңел,
Беҙҙең өсөн йоҡоһоҙ төн
Бер ни ҙә түгел.

Янғырата йәшлек йыры
Урман, тауҙарҙы,
Йәшлек йыры ашыҡтыра
Тыуыр таңдарҙы,

Тиҙерәк тыуһын хеҙмәт таңы,
Ҡояш тағы балҡыһын,
Алған бурыстарҙы үтәп
Башлайһы бар яңыһын.

Бөгөн баҡсала елгенә
Йәшлектең йыры,
Ә иртәгә шул дәрт менән
Ул эштә булыр.

ТЫНЫСЛЫҠ ҺАҠСЫЛАРЫ

Сафта барған һалдат дуҫтарымды
Күргән һайын әле хәҙер ҙә,
Күҙҙәремде алмай ҡарап торам
Үткән юлдарымды хәтерләп.
Ул сафтарҙа минең ал йәшлегем
Һары ҡайыш быуып биленә,
Күкрәп атлап килә бөгөн дә
Ҡанат булып Тыуған илемә.
Күп әсәнең ғәзиз балаһы бар,
Был сафта бар минең туғаным,
Шул сафта бәхет, тыныслыҡҡа
Өмөтө бар бөтә донъяның.

ҒҮМЕР ДАУАМ ИТӘ

(Ватан һуғышында һәләк булған йәшлек дуҫыма)

Яҙҙар килде, йылы ямғыр яуҙы,
Гөлдәр үҫте, урман йәшәрҙе,
Алмағастар булып сәскә атты
Матурлығы беҙҙең йәшәүҙең.
Хуш еҫтәргә сумған баҡсаларҙа
Һандуғастар йырын тыңланым,
Егет саҡтар иҫкә төшкәс тағы
Ул йыр һинең йыр, тип уйланым.
Йәш үләндәр морон төрткән саҡта
Мин уларҙы һинһеҙ күҙләнем,
Үлән түгел, гүйә йылы ерҙән
Ҡалҡа төҫлө һинең хистәрең.
Бер тамырға тотош ҡуш тармаҡтай
Уйҙарың да, йәшлек кесәң дә
Һүнмәнеләр, улар дауам итә
Ҡалған дуҫтарыңдың эшендә.
Яҙҙар килде, йылы ямғыр яуҙы;
Гөлдәр үҫтә, урман йәшәрҙе,
Үҙгәрерҙәр яҙғы матурлыҡтар
Һин йөрәктә мәңге йәшәрһең.

ЯРАТ ИЛЕҢДЕ

Урамдары тотош булһын тиһәң
Колхоз ауылы менән ҡаланың,
Күңеле күтәренке булһын тиһәң
Мәктәбенә киткән балаңдың;
Өҫтәлдәрҙе һығып торһон тиһәң
Дуҫтар өсөн ҡорған табыңдар,
Ҡотло һәм ҡеүәтле булһын тиһәң
Гел бәхеткә илткән аҙымдар;
Тағы хуш еҫлерәк булһын тиһәң
Сәскәләре килер яҙҙарҙың,
Туйҙары шат гөрләп үтһен тиһәң
Быйыл йәше еткән ҡыҙҙарҙың;
Тулы маҡсатына етһен тиһәң
Өндәмәгә ҡуйған ҡултамғаң,
Ҙур еңеүҙәр менән ҡанатланып
Тыныс тыуһын тиһәң һәр бер таң;
Һин ҡырҙамы бөгөн, цехтарҙамы
Ҡайҙа уҙырһаң да көнөңдө,
Һөйәү менән башҡар хеҙмәтеңдә
Ярат, иптәш, Тыуған илеңде.

ҺӨЙГӘНЕМ

Нәҙек билле зифа буйын гөлдәп кеүек,
Сәстәрендә таң елдәре китә үбеп.
Һин ҡайтаһың күгәрсендәй матур атлап,
Һандуғастар ярһып һайрай
һине ҡотлап.
Ҡояш көлөп ҡарап ҡала
юлдарына,
Бар ҡоуҙәндә төрөп йылы
нурҙарына.
Әллә ул да шулай һиңә
ғашиҡ булғап,
Ҡояш, һинән көнләшәм мин
бер аҙ ғына.
Эш өҫтөндә һөйгәнемә
күҙҙәр һалам,
Эштәремә дәрт, мәхәббәт
алып ҡалам,
Мәхәббәтем шундай татлы,
шундай көслө,
Хатта ҡурҡам уны ҡыйып
әйтер өсөн.

БАҪЫУ ЭШТӘРЕ АЛДЫНҒЫЛАРЫНДА

Хеҙмәтте яҡшы ойоштороу — эштең уңышын хәл итә

1. Юғары агротехника яҙы

Мул урожайҙың нигеҙе яҙ һалына. Был яҙғы сәсеүҙе юғары агротехник кимәлдә һәм ҡыҫҡа сроктарҙа үткәреү тигән һүҙ.

Яҙғы сәсеүгә беҙ былтыр көҙ үк әҙерләнә башлағайныҡ. Бөтә культуралар буйынса етерлек әҙерләнгән орлоҡ юғары сифатлы итеп таҙартылып амбарҙарға һалынып ҡуйылғайны. Һоло культураһынан ҡара һолоно айырыу өҫтөндә айырыуса күп эшләргә тура килде. Был ҡыйҙы бөтөрөү өсөн беҙ үҙебеҙҙә эшләнгән «Горка» машинаһын файҙаландыҡ. Һолоно «ВИМ» һәм сортировкалар аша үткәрҙек. Аҙаҡ килеп уны иләктәр менән иләнек. Беҙ 2400 центнер самаһы орлоҡто ағыулап сәсергә тейеш инек. Бында ла колхозсыларҙың ижади хеҙмәте ярҙамға килде. Тимерсе Я. Тришин һәм балта оҫтаһы Б. Пиляки иптәштәрҙең тәҡдиме буйынса ябай машина эшләнек. Уны орлоҡтарҙы ҡоролай, ярым ҡоролай һәм еүешләп ағыулауҙа файҙаландыҡ. Ошо уҡ машинала бойҙай менән люцерна орлоғон бергә ҡушып бутаныҡ. Был машинала эшләүсе 3 кеше сәғәтенә 10-12 центнер орлоҡто ағыулай ала. 600 центнер самаһы бойҙайҙы асыҡ һауала йылыттыҡ. Ентекләп тикшерелгән орлоҡ йоҡа ғына итеп амбарҙарға һалынды һәм йыш ҡына тракторҙар менән ҡуҙғатылып торолдо.

Сәсеү материалдарын һәм ауыл хужалығы инвентарҙарын әҙерләү менән бер рәттән, ойоштороу саралары үткәрелде. Сәсеү осорона эш планы төҙөү яҙға әҙерләнеүҙәге серьёз етешһеҙлектәрҙе асып һалырға һәм уларҙы бөтөрөүгә мөмкинлек бирҙе. Мәҫәлән, сәсеү агрегаттары төҙөүгә тағылмалар етешмәүе беленде. Тимерсе П. Сальников был тағылмаларҙы бик тиҙ эшләне. Өс йыллыҡ агротехник курстың тәүге курсын тамамлаусы 21 колхозсы сәсеүҙең иң яуаплы участкаларына беркетелделәр.

Быйыл беҙ 1700 гектар иртә культуралар сәсергә тейеш инек. Ошоноң менән бергә, 900 гектар самаһы ерҙе яҙ һөрөп сәсергә тура килде.

Бары тик ҡеүәтле ауыл хужалығы техникаһы ғына беҙгә ошондай ҙур күләмле эште ҡыҫҡа срокта юғары агротехник кимәлдә үтәп сығыуға мөмкинлек бирҙе.

Беҙҙең колхозды Хоҙайбирҙин МТС-ының 8 тракторы хеҙмәтләндерҙе. Яҡшы әҙерлек баҫыу эштәренең тәүге көндәрендә үк ойошҡанлыҡ менән эшләүҙе тәьмин итте. Трактористар сәғәт графигы буйынса эшләп, смена нормаларын арттырып үтәнеләр. Мәҫәлән, С. Проничкин һәм М. Бирюков иптәштәр С—80 тракторы менән норма буйынса 25 гектар урынына 35 гектарға тиклем һөрҙөләр. ДТ—54 маркалы машина менән эшләүсе иптәш Тараскин (сменщигы иптәш Кочкуров) смена нормаларын 200 процентҡа үтәүгә өлгәште.

Колхозсылар агрегаттарҙы хеҙмәтләндереүгә бөтә көстәрен бирҙеләр. Һыу һәм яғыулыҡ етешмәүе арҡаһында тракторҙарҙың тик тороу хәле беҙҙә булғаны юҡ. Машиналарға заправка яһау бураҙнала үткәрелде, ә сәскестәргә орлоҡ һалыу агрегаттарҙы туҡтатмайынса башҡарылды. Колхозды эрелеткәс беҙ сәсеү әйләнеше баҫыуҙарының майҙандарын байтаҡ киңәйттек. Был хәл дә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә серьёз йогонто яһаны. Сөнки хәҙер беҙҙә оҙонлоғо 1500 метрҙан да кәм булған аҙон юҡ. Машиналарҙы күсереп йөрөтеүҙе еңеләйтеү маҡсаты менән, трактор бригадаларының етәкселәренә баҫыуҙарҙың чертеждарын бирелде.

Яҙғы сәсеүҙең сифатына беҙ быйыл айырыуса ҙур иғтибар бирҙек. Баҫыуҙарҙа ҡар иреп бөткәс тә, уны үткән йылда ҡалған сүп-сарҙан таҙарттыҡ. Шул арҡала ерҙе предплужниклы һабандар менән һөрөү еңеләйтелде. 700 гектарҙан артыҡ көҙ һөргән ергә культивация үткәрҙек. План буйынса ҡаралған 120 гектар урынына 200 гектарға яҡын бойҙай һәм һоло арҡыры-буй ысул менән сәстек. Ошолай уҡ гранул ашламалар менән ашлап 40 гектар бойҙай сәстек.

Бойҙай орлоғоноң сығыш проценте бер төрлө булмауы сәбәпле уның сәсеү нормаһын үҙгәртергә мәжбүр иттек. Ҡайһы участкала күпме орлоҡ сәселергә тейешлеге сәсеүселәргә, баҫыусылыҡ һәм трактор бригадалары бригадирҙарына ныҡлап аңлатылды. Бынан тыш сәсеү нормаларының һаҡланыуын правление һәм колхоз агрономы иптәш Егошин ныҡлы контролгә алды. Тупраҡтың йылдам киҙеүен күҙ уңында тотоп, орлоҡто 6-7 сантиметр тәрәнлегендә күмдек. Сәскестәрҙең артына катоктар тағылды.

Көнбағыш культураһы уның рәт араларын трактор культиваторҙары менән эшкәртерлек итеп сәселде. Академик Лысенко методы буйынса 8 гектар майҙанда ағас ултыртылды. Хәҙер колхоздың баҫыу һаҡлаусы урман полосалары 32 гектарға етте. Уның байтаҡ өлөшендә һуғарыу үткәреләсәк.

Колхозды хеҙмәтләндереүсе механизаторҙар колхозсылар менән берлектә быйыл юғары урожай алыу өсөн бына шулай ныҡлы нигеҙ һалып ҡалдырҙылар.

Н. Наумкин,
Йомағужа районы М. Горький исемендәге колхоз председателе, СССР Верховный Советы депутаты.

2. Намыҫлы хеҙмәт еңеү килтерҙе

Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙең иң мөһим шарттарынан береһе булып торған колхозсыларҙың һәм механизаторҙарҙың хеҙмәтен дөрөҫ ойоштороуға беҙ айырыуса иғтибар итеп, баҫыу эштәренең иң яуаплы участкаларына коммунистарҙы һәм инициативалы колхозсыларҙы беркеттек. Колхоз правлениеһы членарын баҫыуға — производствола тура-тура эшләргә ебәрҙек. Иҫке нормаларҙы яңы, прогрессив эш нормалары менән алмаштырҙыҡ. Һәр бер баҫыусылыҡ бригадаһына производство заданиеларе бирҙек һәм көндәлек графиктар төҙөнөк. Агитаторҙар бөтә политик-массовый эште сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауға юнәлдереп ҡорҙолар. Тәүге партия ойошмаһы колхоз правлениеһы өҫтөнән партия контроле көсәйтте һәм колхозсылар араһында хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, бөтә эске резервтарҙы файҙаланыу буйынса көрәште киң йәйелдерҙе.

Бөтә был ойоштороу саралары беҙҙең колхозға яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта тамамлау мөмкинлектәрен тыуҙырҙы. Беҙ баҫыу эштәрен 17 апрелдә башланыҡ. Ә сәсеү эшенә өс көндән һуң ғына керештек. Сәсеүҙең тәүге көндәренән үк нормаларҙы арттырып үтәү өсөн социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Дөрөҫ, сәсеүҙең тәүге көндәрендә айырым етешһеҙлектәр ҙә булды, ләкин юғары урожай өсөн көрәшкә эрелетелгән колхоздың бөтә резервтарын туплау был етешһеҙлектәрҙе бик тиҙ бөтөрөү мөмкинлектәрен бирҙе.

Партия члены Таһир Низамов сәскес машинаһында эшләне. Ул көндәлек нормаһы 150—160 процентҡа үтәү менән генә сикләнмәне, колхозсылар араһында агит-массовый эште ойоштороу буйынса ла күп хеҙмәт күрһәтте. Ул сәсеүселәр араһында биш йыллыҡтың йомғаҡтары, коммунизмдың бөйөк төҙөлештәре тураһында беседалар үткәрҙе.

Коммунист иптәш Мәхтәбәр Шәрифуллин ярыуллыҡ ташыуҙы ойоштороҙо. Уның инициативаһы менән бөтә сәсеү осорона етерлек ярыуллыҡ ташылды. Ә коммунист Ахун Бикташировты партия ойошмаһы баҫыуға орлоҡ ташыу эше буйынса яуаплы итеп беркетте. Иптәш Фәрхуллин трактор бригадаһына беркетелде. Ул партия поручениеһен аныҡ һәм оператив үтәй, тракторсылар араһында ике сменала эшләүҙе ойоштороҙо, агит-массовый эште йәйелдерҙе. Социалистик ярыш йомғаҡтарына көн һайын йомғаҡ яһай бара һәм һөҙөмтәләре тураһында механизаторҙарға аңлата.

Пәштәр колхоз производствоһының бөтә тармаҡтарында ла уңышлы эшләйҙәр. Комсомол ойошмаһы ВЛКСМ члендәренең хеҙмәттә авангардлыҡты тәьмин итеү өсөн бөтә сараларҙы күрҙе. Комсомолецтарҙан Ким Зарипов, Рәфис Ҡыямов, Рәхиә Фәләһеф иптәштәр көндәлек нормаларын систематик арттырып үтәнеләр. Ул ғына ла түгел, общественный эштәрҙә актив ҡатнашалар.

Беҙҙең колхозсылар сәсеүҙе 1 Май каменә үк тамамланылар. Был яуаплы һәм ҙур йәкләмә социалистик ярышты киң йәйелдереү һөҙөмтәһендә үтәлде. Беҙҙең колхоздың коммунистары һәм комсомолецтары хеҙмәт алдынғылары булдылар. Ә коммунистарҙың гүзәл хеҙмәт өлгөһө башҡа колхозсыларҙы ла яңы уңыштарға рухландырҙы. Быйыл беҙ 2800 гектар майҙанда сәсеү үткәрҙек.

Тракторҙарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеге юғары. Тракторист иптәш Ласынов смена нормаларын ике тапҡырға арттырып үтәне. Эш сифаты яҡшы. Уның механизаторҙар беҙҙә уңарлап иҫәпләнә.

Эрелетелгән колхоздың кешеләре быйыл беренсе яҙғы сәсеүҙе үткәрҙеләр. Эш бөтә йылдарға ҡарағанда ла ойошҡанығыраҡ, юғары етештереүсәнлек менән барҙы.

Беҙҙең колхоз быйыл һәр бер гектарҙан уртаса йөҙәр бот урожай алыу өсөн көрәшә. Был бурысты үтәр өсөн беҙҙә кешеләр ҙә, бай техника ла етерлек.

Сабирьян Әхтәмов,
Ҡыйғы районы Калинин исемендәге колхоз председателе.

Башҡорт АССР-ы МТС-тарында комбайндар ремонтлау барышы

(План үтәлеше, 1951 йылдың 20 майына, проценттарҙа)

МТС-тар	Ремонтланған	МТС-тар	Ремонтланған	МТС-тар	Ремонтланған
Дәүләкән	100	Степной	29	Таймас	15
Благовар	75	Федоровка	28	Пугачев	14
Тәләкәй	66	Баймаҡ	28	Һуҡайлы	14
Матрай	57	Бакал	28	Забельск	13
Һуҡмыл	57	Мәсәғүт	27	Ҡандра	13
Октябрьский	53	Калинников	25	Ярослав	12
Кулдәрк	46	Чурай	25	Аслыкүл	12
Сыштамаҡ	44	Корос	25	Бүзәп	12
Имәнле Күл	42	Ташлыкүл	25	Серман	12
Мәҡәр	41	Аблан	25	Моторный	12
Андреевка	40	Дмитриевка	24	Байгужа	12
Рәжәп	40	Арслан	23	Ермолаевка	12
Аксен	40	Улай	22	Покровка	11
Баишбулаҡ	40	Ҡалтасы	21	Бере	11
Белорхатай	40	Күп Нылга	21	Байҡы	11
Петровск	39	Шаран	21	Әбдрәззак	10
Ҡаган	38	Ҡаран	21	Вишнево	10
Усть-Икин	38	Стәрлетамаҡ	21	Изяково	10
Суйынсы	37	Касоу	21	Булгаҡ	10
Иштә	37	Ерекле	21	Оҡаебиш	9
Шарип	37	Нурипан	21	Ҡарыш	9
Саҡматош	36	Алаор	20	Усы	8
Борай	34	Малаяз	20	Мусен	8
Тайыш	34	Стәрлебаш	19	Мишка	7
Подлуб	34	Бугорсен	19	Бәләбәй	7
Подгорный	33	Һаҡмар	19	Успен-Ивановка	7
Туҡасаул	33	Арҡаул	19	Шишмә	6
Янаул	33	Мраҡ	18	Кургем	5
Шланды	33	Әбдрешит	18	Ҡарламан	5
Ново-Троицк	32	Балтач	17	Дурас	5
Нәркәй	30	Миәкә	17	Әлмөхәмәт	5
Ямады	30	Бүздәк	17	Тәтешле	4
Туймазы	30	Прлют	16	Таутөмәп	4
Ҡыйғы	30	Учалы	16	Бәкалы	4
Һурәп	29	Хәйбулла	16	Малояз	4
Хоҙайбирҙен	29	Бөжәр	15	Сибай	3

Металл киҫәктәре йыйнайҙар

Стәрлетамаҡ ҡалаһының «Красный пролетарий» һәм Ленин исемендәге заводтары коллективтәре ,металл һыныҡтары йыйнауҙа актив ҡатнашалар. Ҡаланың 9 предприятиеһе был эштә ҙур ғына уңыштарға өлгәште лә инде.

Металл киҫәктәрен тейәп оҙатыуҙа эшселәр араһында социалистик ярыш ойошторолдо. Апрель айында план 154 процентка үтәлде.

Л. Исламов.

Яңы төҙөлөштәр

Эрләтелгән «Игенсе» колхозында (Ҡандра районы) даими төҙөләш бригадаһы эшләй. Ул колхоздың 4 бригадаһы өсөн дә конюшнялар, колхоз правлениеһенең яңы бинаһын эшләпе. Бынан башҡа быйыл 500 баш һарыҡ һыйҙырышлы стандарт аҙбар һәм ҡошсолоҡ фермаһы өсөн бина һалынасаҡ. Ғ. Ғәзизуллина.

ТЕЛЕФОН СЕЛТӘРЕ КИҢӘЙӘ

Быйыл Башҡортостан связь управлениеһенең планы буйынса Маҡар районы үҙәгендә өс километрҙан артығыраҡ оҙонлоҡта телефон линияһына урта ремонт һәм тотош районда йәшәп килгән линияға эрымдағы ремонт үткәрелергә тейешле ине. Район связь бүлеге работниктәре район үҙәгендә ике километрға яҡын яңы линия төҙөнеләр, ҡалған линияларға капиталь ремонт үткәрҙеләр.

З. Низамов.

„ТЫНЫСЛЫҠ ӨСӨН КӨРӘШТӘ СОВЕТ БАШҠОРТОСТАНЫНЫҢ ӘҘӘБИӘТЕ" ТИГӘН ӘҘӘБИ-МУЗЫКАЛЬ КИСӘ

Политик һәм фәнни белемдәр таратыуҙың Бөтә Союз Общественыһының Башҡортостан бүлеге һәм Башҡортостан совет яҙыусылары Союзы 1951 йылдың 26 майында киске 8 сәғәт 30 минутта Луначарский исемендәге баҡсала, йәйге театр бинаһында «Тыныслыҡ өсөн көрәштә Совет Башҡортостанының әҙәбиәте» тигән темаға әҙәби-музыкаль кисә үткәрә.

Тыныслыҡты яҡлаусыларҙың Бөтә Союз конференцияһы делегаты Мостай Кәрим инеш һүҙе менән сығасаҡ.

Кисәлә шағирҙәрҙән Ғайнан Әмири, Шәриф Бикҡол, Әкрәм Вәли, Ғәриф Ғүмәр, Ҡадир Даян, Михаил Иванов, Мостай Кәрим, Хәниф Кәрим, Сәләх Кулибай, Павел Куликов, Назар Нәжми, Василий Трубицын, Владимир Филов һәм Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған һәм халҡ артистәре Диана Нурмөхәмәтова, Мәғәфүрә Сәлиғәскәрова, Александр Сутягин, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Виктор Бенифанд, Вера Лермонтова ҡатнашасаҡ.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 19 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 19 майҙа дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 56-сы ултырышы булып үтте. АҠШ вәкиле Джессеп председателек итте. [illegible]

[illegible] министрҙәр Советенә тапшырыу өсөн килешелмәгән мәсьәлә сифатында көн тәртибенә индереүҙе кәрәкле тип иҫәпләй, тине. Министрҙәр Советы, тип белдерҙе СССР вәкиле, был мәсьәләне шулай уҡ уны көн тәртибенә индереү күҙлегенән сығып та тикшереһеләр. Өс держава вәкилдәре министрҙәр Советы сессияһында был мәсьәләне тикшереүгә үҙҙәренең ғөмүмән ҡаршы килеүҙәрен белдерәләр, ә беҙ, был мәсьәләне тикшереү яғында торабыҙ, тип белдерәбеҙ.

— Джессеп һәм Дэвис, — тине Громыко, — Германияны демилитаризациялау тураһындағы подпунктҡа ҡағылған иҫкәрмәне ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралы көстәрҙе ҡыҫҡартыу тураһында килешелмәгән мәсьәлә менән бер рәттән көн тәртибенең килешелмәгән тексына индерергә кәрәк, тип иҫбатларға маташтылар. Ләкин һәр бер кешегә аңлайышлы булыуынса, әгәр ҙә был тәҡдим ҡабул ителһә һәм көн тәртибе ошолай итеп иғлан ителһә, һәр бер кеше уны ҡоралланыуҙар һәм ҡоралы көстәр тураһындағы мәсьәлә генә түгел, бәлки Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәлә килешелмәгән булып тора икән әле, тип аңлар ине. Беҙ көн тәртибенең тексында бындай ике мәғәнәлеккә юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ.

— Был мәсьәлә буйынса беҙҙең арала үҙ-ара аңлашыуҙы еңеләйтеү өсөн, — тип белдерҙе Громыко, — совет делегацияһы мәсьәләне хәл итеүҙең тағы ла бер вариантын тәҡдим итергә әҙер. Германияны демилитаризациялау тураһындағы подпунктты беҙ, совет делегацияһы тәҡдим иткәнсә, беренсе пункттың дөйөм [illegible] һыу Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советенә тапшырыуға үҙҙәренең нигеҙһеҙ ҡаршы килеүҙәрен алырға риза булһалар, көн тәртибен төҙөү буйынса эш, нитеҙҙә, тамамланған булыр ине инде, һәм тик көн тәртибендә пункттарҙы [illegible]

* * *

ПАРИЖ, 21 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһенең 21 майҙа булып үткән 57-се ултырышында Пароди председателек итте.

21 майҙағы ултырышта беренсе булып сығыш яһап, Пароди көнбайыштағы өс держава делегациялары исеменән совет делегацияһының 19 майҙа индерелгән тәҡдимен ҡабул итеүҙәре тураһында белдерҙе. «Һуңғы сиктә, — тип танылы Пароди, — Громыко тәҡдиме Германияны демилитаризациялау тураһындағы мәсьәләнең формулировкаһы айҡанлы беҙҙең арала килешеү барлығын һәм көн тәртибендә тик уның урыны тураһындағы мәсьәлә буйынса ғына килешмәүҙең булыуын асыҡ аңларға мөмкинлек биреүе менән өҫтөн тора». Икенсе һүҙҙәр менән әйткәндә, Пароди көнбайыш держава вәкилдәре бутарға маташҡан нәмәне СССР делегацияһының асыҡлауын таныны.

Шулай итеп, совет делегацияһының тырышлығы арҡаһында, Германияны демилитаризациялау тураһындағы подпункт өсөн көн тәртибендә урын хаҡындағы мәсьәлә менән бәйләнгән килешеү юлындағы ҡыйынлыҡ бөтөрөлдө. Был мәсьәләне хәл итеү министрҙәр Советы ҡарамағына тапшырыла. Өс держава делегацияһы Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне министрҙәр Советенә тапшырыуға үҙҙәренең ҡаршы килеүҙәрен алырға риза булһалар, көн тәртибен төҙөү буйынса эш, нитеҙҙә, тамамланған булыр ине инде, һәм тик көн тәртибендә пункттарҙы [illegible]

— Шулай итеп, көн тәртибенең беренсе пункты көн тәртибенә ниндәй формала индерелергә тейеш булыуын билдәләүебеҙ мәғәнәһендә уны килешелгән, тип иҫәпләргә мөмкин. Ләкин беҙ тағы ла бер ҡыйынлыҡты еңеп сыҡмаҡ әле. Мин Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенең килешелмәгән пункты сифатында министрҙәр Советенә тапшырыу тураһында совет тәҡдиме осраған ҡыйынлыҡтарҙы күҙҙә тотам. Беҙ, был совет тәҡдименә ҡаршы килеү өсөн бер ниндәй ҙә нигеҙлектәр юҡ, тип иҫәпләйбеҙ.

Унан һуң сығыш яһаған Джессеп Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне килешелмәгән мәсьәлә сифатында көн тәртибенә индереүгә ҡаршы килде, һәм СССР делегацияһы үҙ тәҡдимен яҡлап министрҙәрҙең был мәсьәләне асылда ҡарауҙарын ныҡышма, тип Пароди әйткән фекерҙе яңынан ҡабатланы.

Джессептең был белдереүенә яуап биреп, Громыко былай тине:

Беҙ был мәсьәләне көн тәртибенә индерергә шуға күрә тәҡдим итабеҙ, ул министрҙәр Советы сессияһында асылда ҡаралырға тейеш. Беҙҙең маҡсат — шунда. Кәңәшмәлә был пунктты көн тәртибенә индереү тураһындағы мәсьәлә буйынса килешеүгә өлгәшелмәгәс, совет делегацияһы, министрҙәр үҙҙәре был пунктты көн тәртибенә индерергәме йәки индермәҫкәме тигән мәсьәләне тикшерерҙәр һәм хәл итерҙәр, тип күҙҙә тотоп, был пунктты килешелмәгән пункт сифатында көн тәртибенә индерергә тәҡдим итә лә инде.

Шуның менән ултырыш ябылды.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халҡ-ара демократик федерацияһы комиссияһының Кореяға килеүе

ПХЕНЬЯН, 21 май. (ТАСС). Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Халҡ-ара демократик федерацияһы (МДФЖ) тарафынан Америка-Англия интервенттәренең Кореялағы йыртҡыслыҡтарын тикшереү буйынса төҙөлгән комиссия Кореяға килде. Комиссияға Канаданың прогрессив ҡатын-ҡыҙҙарының вәкиле Нора Катлин Родд етәксилек итә.

Комиссия члендәре Кореяла булыуҙың беренсе минуттарында уҡ Корея ерендә Америка баҫҡынсылары яһаған йыртҡыслыҡтарҙы үҙ күҙҙәре менән күрҙеләр. Улар фронт линияһынан алыҫ торған, бик күп һанда һөжүм итеү ваҡытында һәм, атап әйткәндә, 1950 йылдың 8 ноябрендә Американың 100-ҙән артығыраҡ самолеты бомбаға тотҡан ваҡытта тулыһынса емерелгән һәм көлгә әйләндерелгән Синьыйчжу ҡалаһын күрҙеләр. Ҡаланы варварҙарса юҡ иткәнгә тиклем бында 126 меңдән артығыраҡ кеше йәшәгән 14 меңдән ашыуыраҡ бина бар ине. Һөжүм итеү ваҡытында 5 меңдән артығыраҡ кеше, шул иҫәптән 4 мең ҡатын-ҡыҙ һәм бала үлтерелде. 14 урта мәктәптән икәү генә ҡалған, ҡыҙыл тәре таныу билдәләре булған ҡаланың ике больницаһы емерек өйөмдәренә әйләндерелгәндәр. Комиссия больницаларҙың береһенең емерек өйөмдәрендә ошо таныу билдәләренең ҡалдыҡтарын күрҙе. 26 ауырыу янып үлгән. Америка пираттары янғын солған алған ҡала столовойынан йүгереп сығыусы 30 ҡатын-ҡыҙҙы һәм баланы һауанан атып үлтергәндәр. 260 кеше храмда ваҡытта үлгән. Ҡала баҙарында бик күп халҡ йәшәгән район бушлыҡҡа әйләндерелгән. Был районда 2500 тыныс кеше янып үлгән. Бынан тыш, 3155 кеше яраланған.

Хәҙер ҡала халҡының ҙур күпселеге йорт ҡалдыҡтарынан эшләнгән землянкаларҙа йәшәргә мәжбүр. Комиссия члендәре ошондай бер ниҫә торлаҡта булдылар.

Емерелгән Синьыйчжу һәм Пхеньян ҡалаларына, Пхеньянға барған ваҡытта юлда осраған тиҫтәләгән башҡа ҡалаларға һәм ауылдарға ҡарап, кешеләрҙе, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм балаларҙы, йыртҡыстарса бөтөрөү тураһында белгәс, комиссия члендәре емерек өйөмдәрен ҡарап, шаһиттарҙың ҡот осҡос һүҙҙәрен тыңлап тулҡынландылар. Комиссия председателе Нора Родд сит ил хәбәрселәренә былай тип белдерҙе: беҙҙең беренсе тойғоларыбыҙ — ҡот осҡос — Синьыйчжуҙан Пхеньянға барған ваҡытта беҙ емерелмәгән бер генә ҡаланы ла һәм ауылды ла күрмәнек. Беҙ кешеләрҙең төндә нисек иго сәсеүҙәрен күрҙек. Көндөҙ Америка самолеттары баҫыуҙарҙа эшләүсе крәҫтиәндәрҙе утҡа тоталар. Беҙ баҫыуҙа эшләнгән йәшеренеү урындарында крәҫтиәндәрҙең самолеттарҙан нисек йәшеренеп тороуҙарын күрҙек.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 21 май. (ТАСС). Корея халҡ-демократик республикаһы Халҡ армияһының баш командованиеһе 21 майҙа, Халҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хеҙмәттәшлек итеп, фронттың айырым участкаларында 38-се параллелдән 30 — 40 километр көньяҡтараҡ хәрәкәт итеп, Америка-Англия интервенционистик ғәскәрҙәренә көслө удар яһайҙар, тип хәбәр итә.

Булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, дошмандың 4 меңдән артығыраҡ кешеһе юҡ ителгән һәм яраланған һәм 3121 һалдаты һәм офицере пленға алынған.

Төрлө калибрҙа 180-дән артығыраҡ орудие, 70-тән артығыраҡ пулемет, 1500-ҙән артығыраҡ винтовка, 30 радиоустановка, 800-ҙән ашыуыраҡ автомашина ҡулға төшөрөлгән, уның 236-һы хәрби снаряжение тейәлгән йөк машинаһы.

Дошмандың 25 танкыһы юҡ ителгән һәм 18 самолеты атып төшөрөлгән.

Көнбайыш Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы

Эссендәге митингелә ҡатнашыусыларҙың саҡырыуы

БЕРЛИН, 21 май. (ТАСС). АДН агентствоһы, 19 майҙа Эссендә (Көнбайыш Германия) компартия ойошмаһы тарафынан саҡырылған ҙур митинг булып үтте, тип хәбәр итә. Полицияның ҡаршылыҡ күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, митингелә 4 меңдән артығыраҡ кеше ҡатнашты.

Митингелә ҡатнашыусылар ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн көрәшкә саҡырыусы резолюцияны бер тауыштан ҡабул иттеләр. Тыныслыҡ өсөн көрәшселәрҙең Бохумда, Гельзенкирхенда һәм Дюссельдорфта коммунистар тарафынан саҡырылған өс митингеһен тыйыуға ҡаршы протест белдереп, митингелә ҡатнашыусылар резолюцияла бөтә немецтарҙы үҙҙәренең демократик хоҡуҡтарын һәм шәхси азатлыҡтарын яҡларға һәм конституцияны боҙоуға ҡаршы сығыш яһарға саҡыралар.

«Халҡтан һорау алыуҙы тыйыуға ҡаршы, — тип әйтелә резолюцияла, — бөтә предприятиеләрҙә, профсоюздарҙа, урамдарҙа һәм өйҙәрҙә тыныслыҡ һөйөүсе халҡтың протесен белдерегеҙ. Аденауэрҙең халҡҡа ҡаршы хөкүмәтенең ҙур һуҙылыуынан немец халҡының демократик хоҡуҡтарын яҡлағыҙ».

Америка дипломаттарының Лондондағы кәңәшмәһенә ҡарата

ЛОНДОН, 21 май. (ТАСС). Ошо көндәрҙә Американың Көнбайыш Европа илдәрендәге дипломаттарының Лондонда кәңәшмәһе тамамланды. Кәңәшмә йәшерен үтте. Матбуғатҡа ингән хәбәрҙәрҙә Америка дипломаттарының, хәрби етәкселәренең һәм Маршалл планын тормошҡа ашырыу буйынса администрацияһының кәңәшмәлә ҡатнашҡан вәкилдәренең маршаллаштырылған илдәрҙә артабан экономик ҡол итеү һәм һуғыш әҙерләүҙе көсәйтеү методтарын тикшереүҙәре күренә.

«Санди эмпайр ньюс» газетаһы хәбәрсеһенең һүҙҙәренә ҡарағанда, кәңәшмәлә айырым алғанда, «Төньяҡ-атлантик союзда ҡатнашыусы бөтә илдәрҙә армияға алыуҙың яңы системаһы» эшләнгән. Газетаның артабанғы һүҙҙәренән күренгәненсә, Америка империалистәре АҠШ-тың агрессив пландарына ҡаршы сығыш яһаусы Көнбайыш Европалағы прогрессив көстәрҙе баҫтырыу өсөн яңы саралар эшләйҙәр. Европаны обороналауҙы ныҡытыу буйынса яңы саралар менән бер рәттән, тип күрһәтә шул уҡ газета, кәңәшмәлә «шулай уҡ именселектен яңы системаһын төҙөү тураһындағы мәсьәлә лә ҡаралды — Американлылар, ихтимал, именселектә берләшкән көстәрен төҙөргә тәҡдим итерҙәр, улар именселек өсөн тулыһынса яуаплы буласаҡтар, дөйөм информация үҙәк булдырасаҡтар һәм дөйөм етәкселек аҫтында эшләйәсәктәр».

Англияла автобустар йөрөтөүселәрҙең забастовкаһы

ЛОНДОН, 21 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 20 майҙа Винчестерҙа (Гэмпшир графлығы) национализацияланған юл транспорты системаһында эшләүсе автобустарҙы йөрөтөүселәр баш күтәргәндәр. Автобустарҙы йөрөтөүселәр үҙҙәренең аш ҡаҙнаһын кәметеүгә ҡаршы протест белдереп баш күтәргәндәр.

Редактор F. F. FAФAPOB.

ЕӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — «ДУБРОВСКИЙ».

Рус драма театрында — «КӨНБАЙЫШТАҒЫ СПК».

«Октябрҙә» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘАРЫ».

[illegible]

КИНО

„Донец шахтерҙары"

Беҙҙең Донбасс — Бөтә Союз кочегаркаһы.

Бында ижади тырыш хеҙмәт ҡайнай. Шахтерҙар шатлыҡлы тормош менән йәшәйҙәр. Ер өҫтө лә, уның аҫты ла хәҙер айырыу мөмкин булмаған бер күренештә: ер аҫтында бер ниҫә метр түбәндә электр вагонеткалары, осҡан уҡ кеүек, күренеп ҡалалар, өҫтә, киҫтәрен шахтерҙар ҡалаһы мендәрсә уттар менән алыҫтарға балҡып тора.

Йәйәүлеләр, машиналар ташҡыны. Улар почетлы шахтер Степан Недоляның 50 йыллыҡ хеҙмәт юлын билдәләргә йыйналалар. Бына юбиляр, Социалистик Хеҙмәт Геройы Степан Недоля үҙенең ҡарсығы менән шахтерҙарҙың бөтә йәрәктән, ҙур ихтирам менән сәләмләүе аҫтында киң урамдан ысын хужаларса килә.

Юбилейға күмерселәр йыйналғандар: унда Недоляның бөтә династияһы — Степан Недоляның улы, шахтала парторг Павел Недоля (артист В. Доронин), шахта начальнигы Сидор Трофимович Горовой (артист В. Меркурьев), күмер тейәүсе Вася Орлов (артист А. Петров) һәм башҡалар бар. Азат хеҙмәт кешеһенең күп йыллыҡ һәм уңышлы хеҙмәт юлын билдәләп, маҡтау һүҙҙәре яңғырай.

Парторг Павел Недоля ошонда шахтерҙарҙың элекке ауыр тормошон кәүҙәләндереүсе һүрәткә күрһәтә: ер аҫтында һыу эсендә, ҡыйыҡ һәм тәпәш бағаналар [illegible]

[illegible] үсә һәм бөтә ғүмерен шахта тормошо менән бәйләй.

Граждандар һуғышы йылдары. Степан Недоля Ҡыҙыл гвардеецтәр отряды сафында, алда, ҡулына «Бөтә власть Советтәргә!» тигән һүҙҙәр яҙылған Ҡыҙыл Байраҡ тотоп, Клим Ворошилов етәкселегендә фронтҡа китеүсе эшелон буйлап йырлап килә. Улар революцияны һаҡларға китәләр.

Россия күгендә туп тауыштары тынды. Йәш республика емертелгән хужалыҡты аяҡҡа баҫтыра. Күмер — промышленность өсөн икмәк ул! Ошо лозунг аҫтында күмер сығарыу өсөн көрәш фронты йәйелдерелә. Степан Недоля бында ла алдынғы сафта.

Социализм илендә хеҙмәт башҡа бөтә общественный ҡоролош менән сағыштырғанда ла күберәк етештереүсәнлекле, партия һәм Совет хөкүмәте уны артабан үҫтереү өсөн ҙур хәстәрлек күрәләр. Совет яңы ҡоролоштоң еңеүе өсөн был төп һәм хәл иткес шарт булып тора. Социализм илендә хеҙмәт етештереүсәнлеген үҫтереү күп хеҙмәт һалыуҙы талап иткән процестарҙы киң рәүештә, тулыһынса механизациялаштырыу иҫәбенә бара.

Шахтаға илдең бөтә күмер промышленносе предприятиеләрендә тәү тапҡыр күмер ҡырҡыу комбайны индерелә. Уны хөкүмәткә обҙор менән инженер-конструкторҙан башлап, (артист В. Дружников) бөйөк [illegible]

итә: комбайн ҙур етештереүсәнлек менән эшләй башлай. Партия бындай комбайндарҙы мөмкин тиклем күберәк булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуя.

Тәүге тәжрибә нигеҙендә урында күмер ҡырҡыу комбайнын производствоға индереү мәсьәләһе менән партияның Өлкә Комитете секретары Кравцов (артист С. Лукьянов) һәм күмер промышленносе министре (артист В. Хохряков) серьез эш алып баралар. Комбайн шахтерҙар араһында ҙур популярлек менән файҙалана. Йәштәр инде уның тураһында йыр ҙа сығарып өл- [illegible]

йәшәй торған ҡала!

Кремлдә партия һәм хөкүмәт етәкселәре йыйналғандар. Иптәш Сталин (артист М. Геловани) күмер промышленносе министре һәм партияның Өлкә Комитете секретарынан шахталарҙа күмер ҡырҡыу комбайнын ҡуллана башлау тураһында атайҙарса хәстәрлек менән һораша һәм шунда уҡ был өлкәлә алда торған бурыстарҙы үҙенә генә хас булған алдан күреүсәнлек менән билдәләй.

Күмер табыу эше хәҙер инде тағы ла юғарыраҡ квалификациялы булыуҙы та- [illegible]

ның интерестәре менән йәшәүҙәрен күрәһең. Сидор Трофимович Горовойҙың Өлкә Комитет секретары менән ысын йөрәктән булған бәседәһы хәтерҙә ҡалырлыҡ һәм өлгө булырлыҡ бер күренеште тәшкил итә. Горовой — ҙур тәжрибәле кеше, рядовой шахтерҙан алдынғы шахта начальнигына тиклем барып еткән. Комбайндарҙы ла уның участкаһы тәү башлап ҡулланды. Ләкин ул ҡеүәтле, ҡатмарлы техникаға оҫта етәкселек итеүҙе уны ныҡ белгән, тулы ҡеүәтендә файҙалана белеү мөмкинлегенә эйә булған йәш специалистәргә тапшырырға кәңәш итә, ә үҙенә йәш быуынды — һөнәрселәр мәктәбендә уҡыусыларҙы тәрбиәләү эшен биреүҙе һорай. Тамашасы фильм аҙағында инде уны үҙе тәрбиәләгән һөнәрселәр мәктәбе уҡыусылары араһында, шахтерҙарға буласаҡ достоин өҫтәмә менән күрә.

Фильм күмерселәрҙең дөйөм еңеүҙәрен демонстрациялаусы күп халҡлы митинг менән тамамлана. Трибунала алдынғы күмер сығарыусылар. Алда, әле генә шахтанан сыҡҡан Степан Недоля ҡайнар телмәр һөйләй. Күмер сығарыуҙа биш йыллыҡ план срогынан алда үтәлгән. Ул үҙенең сығышын партияға, бөйөк Сталинға мөхәббәт һәм бирелгәнлек һүҙҙәре менән тамамлай. Майҙан өҫтөндә уның: «Россияла тыуыуым менән, бөйөк Сталин менән бер эпохала йәшәүем менән бәхетлемен!» тигән һүҙҙәре яңғырай.

Билдәле булғанынса, ВКП(б) Үҙәк Комитете бынан дүрт йыл элек «Ҙур тормош» кинофильменең икенсе серияһы тураһында махсус ҡарар ҡабул итеп, шахтерҙар тормошон художестволы кәүҙәләндереү өлкәһендәге ҙур етешһеҙлектәр- [illegible]

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлеге — 2-80-49, [illegible] культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02490 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

КЫҘЫЛ БАШКОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

№ 101 (8818)
1951 йыл
25
МАЙ
йома

Хаҡы 20 тин.

Б Ө Г Ө Н Г Ө Н О М Е Р Ҙ Ә:

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА. ЮЛ ТӨҘӨҮ АЙЛЫҒЫ (1-се бит).
МӘКТӘПТӘРҘӘ ЭКЗАМЕНДӘР. (1-се бит).
1951 ЙЫЛДЫҢ I КВАРТАЛЫНДА РСФСР ХАЛҠ ХУЖАЛЫҒЫН ҮҪТЕРЕҮҘЕҢ ГОСУДАРСТВО ПЛАНЫНЫҢ ҮТӘЛЕШЕ ЙОМҒАҠТАРЫ ТУРАҺЫНДА (1-се бит).
ПРОПАГАНДИСТАРҒА ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА. Д. Фекляев. — Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта ауыр промышленность һәм тимер юл транспорты. (2-се бит).
СССР СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТЕРСТВОҺЫНДА (2-се бит).
СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. Х. Камалов. — Советтарҙың ойоштороу-массовый эштәрен юғары кимәлгә. (3-сө бит).
Х. Сеитов. Даими комиссияларҙың эшмәкәрлеге. (3-сө бит). А. М. Самарин, — Бөйөк рус металлургы. (3-сө бит).
Ф. Ғималетдинов. Йәшел пояс (3-сө бит).
ФЕЛЬЕТОН. Нур Ғәлимов. — Мәсетлелә бар күпер уны кемдәр төҙәтер?.. (4-се бит).
Ә. Бикчантаев, И. Егоров. — Тайга рейд (4-се бит).
ДҮРТ ДЕРЖАВА СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРҘАРЫ УРЫНБАСАРҘАРЫНЫҢ ӘҘЕРЛЕК КӘҢӘШМӘҺЕ. (4-се бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР. (4-се бит).

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын уңышлы тамамлайыҡ!

Беҙҙең партиябыҙҙың Үҙәк Комитеты, иптәш Сталин үҙе коммунистарҙың, бөтә етәксе кадрҙарҙың марксистик-ленинсе белем кимәлдәрен күтәреү тураһында гел хәстәрлек күрәләр. **«Ленинсе бер ҡарата торған фән тармағының специалисы ғына булып ҡала алмай, тип өйрәтә иптәш Сталин, шуның менән бергә ул үҙ иленең әҙмышы менән яҡындан ҡыҙыҡһына торған, общественный үҫеш закондары менән таныш булған, был закондарҙы файҙалана белә торған һәм илдә политик етәкселек итеүҙә актив ҡатнашыусы булырға ынтыла торған политик-общественник булырға тейеш».**

Республикабыҙҙың партия ойошмалары, ВКП(б) Үҙәк Комитетының һәм иптәш Сталиндың күрһәтмәләрен үтәй барып, партия пропагандаһын ойоштороуҙа ағымдағы уҡыу йылында ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Күп кенә партия ойошмаларында коммунистарҙың политик уҡыуҙары ойошҡанлыҡ менән һәм юғары идея-теоретик кимәлдә алып барылды. Занятиеларҙа коммунистарҙың активлектары күтәрелде. Уҡыу пландары билдәләнгән сроктарҙа үтәлеп килә.

Хәҙер партия ойошмалары алдында мөһим бурыс — партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын уңышлы тамамлауҙы тәьмин итеү бурысы тора. ВКП(б) район комитеттарының күбеһе был йәһәттән ҙур эш алып баралар. Пленумдарҙа, бюро ултырыштарында, тәүге ойошмаларҙың йыйылыштарында уҡыу йылын ойошҡанлыҡ менән тамамлау мәсьәләләре тикшерелә. Үтелгән материалдарҙы ҡабатлауға серьез иғтибар бирелә. Йомғаҡлау занятиеларын һәм беседаларҙы үткәреү буйынса пропагандистарға практик ярҙам күрһәтелә.

ВКП(б)-ның Эйәнсура район комитеты йомғаҡлау занятиеларына әҙерлек мәсьәләһе буйынса партия ойошмаһы секретарҙарының кәңәшмәһен үткәрҙе. Бынан тыш, пропагандистарҙың кәңәшмәһе саҡырылды. Бында йомғаҡлау занятиеларын үткәреүҙең өлгө планы һәм методикаһы тикшерелде. Большевизмдың теорияһын һәм тарихын үҙ алдарына өйрәнеүселәргә ярҙамға махсус лекциялар үткәрелә.

ВКП(б)-ның Маҡар райкомы партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын уңышлы тамамлауға әҙерлек мәсьәләһен март айында уҡ үҙенең бюро ултырышында ҡараны һәм йомғаҡлау занятиеларын ойошҡанлыҡ менән үткәреүҙе тәьмин итеүгә йүнәлтелгән ҡарар ҡабул итте. Пропагандистарҙың район кәңәшмәһе үткәрелеп, унда политик мәктәп һәм түңәрәктәрҙең етәкселәре йомғаҡлау занятиеларын үткәреү буйынса тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын уңышлы тамамлау бурысы партия ойошмаларынан кадрҙарҙы марксистик-ленинсе тәрбиәләү эшенә, бөтә коммунистарҙың политик уҡыуҙарына иғтибарҙы тағы ла көсәйтеүҙе талап итә.

ВКП(б)-ның район комитеттары, уларҙың пропаганда һәм агитация бүлектәре уҡыу йылын тамамлауҙа хаталарға, партияның күрһәтмәһен боҙоуҙарға юл ҡуймау өсөн бөтә саралар күрергә тейештәр. Шулай ҙа ҡайһы бер урындарҙа уҡыу йылын ваҡытынан алда тамамларға ынтылыу факттары бар.

Ҡайһы бер партия ойошмаларында уҡыу материалдарын үтеүҙә ашығыуға юл ҡуйыла. ВКП(б)-ның Учалы район комитеты быға бик асыҡ миҫал булып тора. Районда ҡайһы бер түңәрәктәр һәм политик мәктәптәр программаны үтеүҙә күп кенә темаларға артта ҡалғандар. Эште «төҙәтергә» теләп, ВКП(б) райкомының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире иптәш Минасов уҡыу йылы аҙағына тиклем ҡалған ваҡытты максималь файҙаланырға, аҙнаға 1-2 өҫтәмә занятие үткәрергә бойороҡ биргән. Был уҡыуҙың сифатына ҙур зарар килтерә, занятиеларҙың идея кимәлен түбәнәйтә. Ә партия ойошмаларының төп бурысы тап бына занятиеларҙың идея кимәле тураһында хәстәрлек күреүҙә тора бит.

Партияның ҡайһы бер район комитеттары коммунистарҙың политик уҡыуҙарына «ҡыҫылмау» позицияһына баҫҡандар. Бына шуның һөҙөмтәһендә Благовар, Мәләүез һәм Ҡандра районларында занятиелар бик йыш өҙөлә, йөрөш түбән. Большевизмдың теорияһын һәм тарихын үҙ алдарына өйрәнеүселәрҙең эшенә контроль йомшаҡ ҡуйылған. Был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн конкрет саралар күрелмәй.

Политик мәктәп һәм түңәрәктәр эшенең сифатын артабан күтәреү, уҡыу пландарын уңышлы үтәүҙе һәм йомғаҡлау занятиеларын юғары кимәлдә үткәреүҙе тәьмин итеү партия ойошмаларының төп бурысы булып тора. Быны бер генә минутҡа ла оноторға ярамай. Иң яуаплы осорҙа партия мәғарифенең эшенә иғтибарҙы йомшартыу ғәфү ителерлек хәл түгел. Занятиеларҙың регуляр һәм юғары кимәлдә үткәрелеүенә, тыңлаусыларҙың бөтәһенең йөрөүҙәренә һәм уларҙың уҡыу материалы өҫтөндә эшләүҙәрен көсәйтеүгә өлгәшергә кәрәк.

Партия мәғарифе системаһында уҡыу йылын ойошҡанлыҡ менән һәм уңышлы тамамлау өсөн йомғаҡлау занятиеларына һәм беседаларына әҙерлекте бөтә яҡлап көсәйтергә кәрәк. Йомғаҡлау занятиеларын үткәреүҙең өлгө пландарын һәм методикаһын эшләүгә серьез иғтибар бирелергә тейеш. Был эштә партия кабинеттарының роле ҙур. Улар тыңлаусыларға һәм пропагандистарға ҡабатлауҙы яҡшыраҡ ойоштороуҙа һәм йомғаҡлау занятиеларын эшлекле үткәреүҙә практик ярҙам күрһәтергә бурыслылар. Йомғаҡлау занятиеларын киң йәйелдерелгән беседа формаһында, коммунистар үҙҙәренең белемдәрен тулыраҡ күрһәтә алырлыҡ итеп үткәрергә кәрәк. Шул занятиеларҙа уҡ һәр бер коммунистың киләһе уҡыу йылында партия мәғарифенең ниндәй формаһында уҡыясағын билдәләү маҡсатҡа ярашлы буласаҡ.

Уҡыу йылы тамамланыуға күп ваҡыт ҡалманы. Партия ойошмалары уҡыу йылын ойошҡанлыҡ менән, юғары идея-теоретик кимәлдә тамамлау өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр. Был партия пропагандаһын артабан яҡшыртыуға, партия ойошмаларының боевой һәләтлектәрен күтәреүгә ярҙам итер.

Башкортостан нефтселәрен СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау

СССР Верховный Советы Президиумының 1951 йыл 15 май Указы менән СССР нефть промышленносының Башҡорт АССР-ы буйынса төп профессия эшселәре, мастерҙары, етәксе һәм инженер-техник работниктары күп йыл буйына хеҙмәт иткән һәм яҡшы эшләгән өсөн СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградланды.

«Башнефть» берекмәһенең «Ишембайнефть» тресы буйынса 557 кеше, шуларҙан Ленин ордены менән 21 кеше, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән — 41, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» медале менән — 175, «Хеҙмәт отличиеһы өсөн» медале менән 320 кеше наградланды.

Ленин ордены менән наградланыусылар араһында беренсе номерлы нефть промыслаһының ер аҫты ремонты буйынса өлкән мастеры Басыров Латип Басыр улы, икенсе номерлы нефть промыслаһының ер аҫты ремонты буйынса өлкән мастеры Вахитов Акмал Ғилфан улы, бораулау мастеры Ермаков Иван Иванович, быра оҫтаһы, вышкалар яһаусы Колигов Василий Лукич һәм башҡалар бар.

«Башнефтезаводтар» берекмәһе работниктарынан 4 кеше: заводтың өлкән операторы Ванюшин Петр Федорович, бүлек начальнигы Боротенко Дмитрий Николаевич, оператор Мищенко Алексей Васильевич, баш энергетик Скрыпник Ананий Демьянович Ленин ордены менән, 38 кеше Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены, 305 кеше «Хеҙмәт отличиеһы өсөн» медале менән наградланды.

«Башнефть» берекмәһенең «Туймазынефть» тресы буйынса бөтәһе 306 кеше наградланды. Шуларҙан Ленин ордены менән 13 кеше, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән — 25, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» медале менән — 82 һәм «Хеҙмәт отличиеһы өсөн» медале менән 186 кеше.

Беренсе номерлы бораулау конторраһының бораулаусыһы — Аганов Леонтий Федорович, скважиналарҙы капиталь ремонтлау конторраһының бораулау мастеры, III ранг административ хеҙмәттең тау директоры Балякин Степан Тимофеевич, вышка-монтажлау цехы начальнигы Малов Павел Филиппович, скважиналарҙың ер аҫты ремонты мастеры Семенов Николай Семенович һәм башҡалар Ленин ордены менән наградландылар.

«Башнефть» берекмәһе работниктарынан Ленин ордены менән 12 кеше, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән 24, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» медале менән — 54, «Хеҙмәт отличиеһы өсөн» медале менән 110 — бөтәһе 200 кеше наградланды.

Ленин ордены менән наградланыусылар һанында бораулаусы Альшин Сәйфулла Йосоп улы, бораулау мастеры Аркушин Пантелей Леонтьевич, бораулау конторраһының слесары, III ранг административ хеҙмәттең тау директоры Малочкин Александр Алексеевич, разведка начальнигы Загорожный Артем Алексеевич һәм башҡалар инәләр.

«Хеҙмәт батырлығы өсөн» һәм «Хеҙмәт отличиеһы өсөн» медалдәре менән «Башнефтестрой» тресы буйынса 71 кеше, Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһы работниктарынан 25 кеше, нефть промышленносы министерствоһының башҡа предприятиеларынан һәм ойошмалары работниктарынан 51 кеше наградланды.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Өфө кабель заводы коллективы үҙенең йыллыҡ производство программаһын срогынан алда тамамлау өсөн көрәшә.

Һүрәттә: заводтың стахановсыһы оплетчица иптәш Ибраһимова эш өҫтөндә. Ул смена заданиеһын 150 — 170 процентҡа үтәй.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Скважиналарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алалар

«Ишембайнефть» тресының 2-се номерлы промыслаһында иптәш Левашов етәкселек иткән эрелтелгән нефть сығарыу участкаһының өлкән операторҙары Носонова, Пахомов һәм Чуриков иптәштәрҙең инициативаһында скважиналарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алыу башланды. Операторҙар үҙ скважиналарын социалистик һаҡлыҡҡа алыуҙары тураһында промысла администрацияһына ғариза бирҙеләр.

Нефтсеселәр, скважиналарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алып, үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәрен 1951 йылда нефть сығарыуҙы, тағы ла үҫтереүгә, иптәш Сталинға биргән социалистик йөкләмәне срогынан алда арттырып үтәүгә ирешәйҙәр.

Промысланың оборудованиеларҙы социалистик һаҡлыҡҡа тапшырыу буйынса ойошторолған комиссияһы акт һәм махсус документтар әҙерләне.

Хәҙер иптәш Левашов бригадаһы үҙенең көсө менән скважиналарҙың ер өҫтө оборудованиеларын ремонтлай башланы.

Скважиналарҙы социалистик һаҡлыҡҡа алыу участкала ҡышҡы шарттарҙа нормаль эшләү өсөн әҙерлек менән бергә алып барыла. Иптәш Левашов инициативаһында башланған был тәҡдимгә «Ишембайнефть» тресының бөтә участка коллективтары ла ҡушылдылар.

Б. Морзағалиев.

Взностарҙы срогынан алда индерәләр

Ҡыҙыл яр. Нуриман районы хеҙмәтсәндәре СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең яңы Государство заемына берҙәм яҙылып, взностарҙы срогынан алда индереүҙе киң йәйелдерҙеләр.

Красный ключ посёлка Советы (председателе иптәш Мөхәмәтьянов) дөйөм подписка суммаһының 45 проценте, Октябрь ауыл Советында — 41, Дуваней ауыл Советында 40 проценты аҡсалата индерелде. Күп кенә колхозсылар, мәҫәлән, Калинин исемендәге колхоздың колхозсылары Рәхмәтуллин, Ғәләмов, колхоз председателе Ванышкин һәм башҡа бик күп иптәштәр взностарын тулыһынса индерҙеләр.

И. Дәүләтбаев.

Коммунизм төҙөлөштәренә вклад

Ҡандра. Бөйөк коммунизм төҙөлөштәрен тиҙләтеү маҡсатында хеҙмәтсәндәр заем взностарын срогынан алда индерәләр. Балтай ауыл Советы (председателе иптәш С. Вәлиева) ингән колхоздарҙа заем взностарын йыйнау айырыуса уңышлы бара. Бында дөйөм подписка суммаһының 60 проценттан артығыраҡ аҡсалата индерелде лә инде.

Шулай уҡ Ҡандра күл, Кендектамаҡ, Чукады баш, Ҡарамалы Ғөбәй ауыл Советтарында колхозсылар заем взностарын май айында уҡ тулыһынса түләп бөтөрөү өсөн көрәшәләр.

М. Сәләхов.

Черниковск электр лампалары заводы коллективы стахановсы вахтала эшләй.

Һүрәттә: заводтың стахановсыһы спиралдар уралыусы иптәш Калинина эш өҫтөндә. Ул үҙенең смена заданиеһын 120 — 130 процентҡа үтәй.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Юл төҙөү айлығы

Эш ойошҡанлыҡ менән бара

Йомағужа районы колхоздары быйыл юл төҙөү айлығын ойошҡанлыҡ менән башланылар. Юл төҙөү эшендә 600-ҙән артыҡ кеше һәм 300-гә яҡын ат эшләй.

Иптәш Ғәбит Хәмидуллин етәкселек иткән «Кеңгәк» ауыл хужалығы артеле членары юл төҙөүҙә актив ҡатнашалар. Унда иптәш Фәхри Ғәбидуллин етәкселегендә 15 кешенән торған махсус бригада төҙөлдө һәм 6 ат беркетелде. Был бригада членары айлыҡтың тәүге биш көнөндә уҡ үҙҙәренә бирелгән планды 74 процентҡа үтәнеләр.

Сталин исемендәге колхоз членары, 1951 йылдың юл төҙөү планын тулыһы менән үтәп, 240 ат-көнө, 396 кеше-көнө эшләнеләр. Хәҙер бындай алдынғы колхоздар һаны районда көндән-көн арта бара.

Ә. Исәнаев.

Культбригада ремонтсылар янында

Беҙ айлыҡ башланыуҙың тәүге көндәренән уҡ юл төҙөүҙә ҡатнашыусыларҙы систематик рәүештә культуралы хеҙмәтләндереүҙе үҙебеҙҙең көндәлек эшебеҙ итеп ҡуйҙыҡ. Бының өсөн 8 кеше составында булған культбригада ойошторҙоҡ.

Беҙҙең тәүге концерт Чуғай — Баймаҡ юл участкаһында булды. Иптәш Соловьева етәкселек иткән был бригада А. Слободскийҙың бер шаршаулыҡ пьесаһын ҡуйҙы һәм 15 номерҙан торған концерт бирҙе. Тамашасыларға бигерәк тә «Тыуған ил», «Миҙәлә» тигән йырҙар, рус халҡ частушкалары оҡшаны.

А. Әлтекеева,

Ҡаланың алдынғы предприятиелары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ

1951 йылдың производство планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты артабан йәйелдереү, промышленность һәм транспорт эшендә сифат күрһәткестәрен күтәреү маҡсатында, ҡала Советы исполкомы һәм ВКП(б) ҡала комитеты бюроһы ҡарар итә:

1. Үҙ эшендә түбәндәге күрһәткестәргә өлгәшкән алдынғы промышленность предприятиеһе коллективтары өсөн ҡала Советы исполкомы һәм ВКП(б) ҡала комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын булдырырға:

а) изделиеларҙың билдәләнгән номенклатураһында планды 100 процентҡа үтәп, валовой продукция етештереү буйынса планды үтәүҙә иң юғары процентҡа өлгәшкәндә;

б) коллектив стахановсы цех һәм производство участкаларының булыуын иҫәпкә алып, хеҙмәт етештереүсәнлеге буйынса план үтәлеше валовой продукция етештереү буйынса план үтәлешенән кәм булмағанда;

в) айҙың бөтә декадалары буйынса предприятие ритмле эшләгәндә;

г) предприятие рентабелле эшләгәндә һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү буйынса планды үтәгәндә.

2. Һан һәм сифат күрһәткестәре буйынса государство планын үтәүҙә иң яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкән тимер юл һәм һыу транспортының алдынғы предприятиелары өсөн ҡала Советы исполкомы һәм ВКП(б) ҡала комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын булдырырға.

3. Күсмә Ҡыҙыл Байраҡтарҙы алдынғы промышленность һәм транспорт предприятиеларына һәр айҙың 20 числоһынан да һуңламай тапшырырға.

Металл һыныҡтарын йыйнау

Илебеҙҙең металлургия промышленносын күтәреүҙә металл һыныҡтарын йыйнап тапшырыу ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Производствоға кәрәге булмаған, туҙып ятҡан металл һыныҡтарын һәр бер предприятиела табырға мөмкин. Беҙҙең заводта йылдар буйына аяҡ аҫтында ятҡан тимер ҡалдыҡтары бик күп ине. Беҙ быйыл уларҙы йыйнап, мартен мейестәренә оҙаттыҡ.

Заводта металл һыныҡтарын йыйнау һәм уларҙы вагондарға тейәп оҙатыу буйынса махсус бригада ойошторолдо. Был бригадаға мин етәкселек итәм. Быйыл завод иҡтаһын металл һыныҡтарынан таҙартыу һәм йыйналған металдарҙы оҙатыу буйынса бик күп эштәр башҡарҙыҡ.

Шул йылдың 4 айы эсендә беҙҙең завод 400 тоннанан артығыраҡ металл йыйнап оҙатты. Металл һыныҡтары йыйнау буйынса заводҡа бирелгән задание 87 тоннаға арттырып үтәлде. Металл һыныҡтарын йыйнауҙа беҙгә 7-се, 9-сы һәм башҡа цехтарҙың комсомолецтары ярҙам иттеләр.

П. Клёнов.

Өфө нефть эшкәртеү заводының дворовой цехы мастеры.

Мәктәптәрҙә экзамендәр

Рус теленә эйә булалар

Беҙҙең районда 81 мәктәп бар. Уларҙың күбеһендә дәрестәр башҡорт һәм татар телдәрендә алып барыла.

Рус теленә мөмкин тиклем яҡшыраҡ эйә булыу өсөн көрәш — беҙҙең мәктәптәр эшендә үҙәк бурыс булып тора.

Баләкәй Учалы мәктәбе — районда иң йәш мәктәптәрҙең береһе һәм уның уҡытыусылар коллективы уҡыусыларҙы ныҡлы һәм тәрән белем менән ҡоралландырыуҙа күренекле уңыштарға өлгәште. Быны экзамендәр барышы асыҡ раҫлай. Унда 17 уҡыусы өлгөргәнлек аттестатына экзамен тапшыралар һәм улар рус теле буйынса үткәрелгән экзамендәрҙә бөтәһе лә юғары баһа алдылар.

Был мәктәптәрҙең башҡа кластарында ла экзамендәр уңышлы бара. Йәш уҡытыусы иптәш Емельева алып барған 4 «г» класында 27 уҡыусы рус теле буйынса экзаменде бөтәһе лә уңышлы тапшырҙылар.

Байрамғол совхозы ете йыллыҡ мәктәбендә (директоры иптәш Кручин) 7-се класс уҡыусылары рус теле буйынса экзамендәрҙә шулай уҡ яҡшы күрһәткестәр бирҙеләр.

Е. Крупеня,

Учалы районы мәғариф бүлеге инспекторы.

Экзамендәр уңышлы бара

Күгәрсен районы мәктәптәрендә экзамендәр ҙур ойошҡанлыҡ менән бара. Экзамендәрҙең тәүге көндәре уҡ күпселек мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эштәренең яҡшы ҡуйылғанлығын күрһәтә. Күгәрсен урта мәктәбендә өлгөргәнлек аттестатына экзамен тапшырыусы 11 уҡыусы рус теленән сочинение яҙыу буйынса эйтә уңышлы үтәнеләр.

Иптәш Сталиндың тел ғилеме тураһындағы гениаль хеҙмәттәре нигеҙендә рус телен һәм әсә телен уҡытыуҙы ҡайтанан үҙгәртеп ҡороу районлың башҡа мәктәптәрендә лә яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Саҡмар ете йыллыҡ мәктәбендә (директоры иптәш Ғ. Азнабаев) 7-се класта экзамен биреүсе 22 уҡыусының күпселеге «отлично» һәм «яҡшы» билдәләре алыуға өлгәштеләр.

Мраҡ ете йыллыҡ мәктәбенең уҡыусылары ла экзамендәрҙе уңышлы тапшыралар.

М. Мөхәмәдиев.

Һөҙөмтәләр яҡшы

Быйыл экзамендәр башҡа йылдарға ҡарағанда, айырыуса ойошҡанлыҡ менән башланды. Экзамендәрҙең тәүге көнөндә дүртенсе һәм бишенсе кластарҙа рус теле буйынса яҙма эштәр үткәрелде. Дүртенсе кластағы 31 баланың өсөһө «5», егермеһе «4», барыһы тиҫ туғыҙы тиҫа «3» билдәһенә яҙҙылар. Шулай уҡ бишенсе класты тамамлаусыларҙың күпселек өлөшө яҙма эште «4» һәм «5» билдәләренә генә тапшырҙылар.

Тәүге көндөң һөҙөмтәләре экзамендәрҙең уңышлы үтәсәгенә ҙур ышаныс тыуҙырҙы.

Б. Емельянов,

Баймаҡ 1-се номерлы ете йыллыҡ мәктәп директоры.

1951 йылдың I кварталында РСФСР халҡ хужалығын үҫтереүҙең государство планының үтәлеше йомғаҡтары тураһында

РСФСР Статистика Управлениеһы Белдереүе

РСФСР республика һәм урындағы промышленносының, ауыл хужалығының үҫеүе һәм тауар әйләнешенең йәйелдерелеүе 1951 йылдың 1 кварталында түбәндәге мәғлүмәттәр менән характерлана:

I

РСФСР республика һәм урындағы промышленносы тарафынан **валовой продукция** етештереүҙең квартал планы 100,1 процентҡа үтәлде. РСФСР-ҙың айырым министерстволары һәм ведомстволары тарафынан промышленностың валовой продукция етештереү планы түбәндәгеса үтәлде:

	1951 йылдың 1 кварталында квартал планының үтәлеү проценты
РСФСР Урындағы промышленность министерствоһы	103
РСФСР Төҙөлөш материалдары промышленносы министерствоһы	101
РСФСР Урман промышленносы министерствоһы	85
РСФСР Урындағы яғыулыҡ промышленносы министерствоһы	103
РСФСР Еңел промышленносы министерствоһы	101
РСФСР Аҙыҡ промышленносы министерствоһы	97
РСФСР Ит һәм һөтсәлек промышленносы министерствоһы	99
РСФСР Балыҡ промышленносы министерствоһы	81
РСФСР Автомобиль транспорты министерствоһының промышленность предприятиелары	101
РСФСР Министрҙар Советы эргәһендәге Полиграфия промышленносы издательстволары һәм китап сауҙаһы буйынса управлениеның промышленность предприятиелары	108
РСФСР Һаулыҡ һаҡлау министерствоһының промышленность предприятиелары	101
РСФСР промысловой кооперацияһы советы	103
РСФСР лесопромысловой кооперацияһы советы	100,2
Всекоопинсоюз	105

1951 йылдың 1 кварталында РСФСР республика һәм урындағы промышленносының валовой продукцияһы, 1950 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда, 15 процентҡа үҫте.

II.

РСФСР-ҙың колхозларында һәм совхоздарында ағымдағы йылда яҙғы сәсеү, үткән йылға ҡарағанда, ҡыҫҡа срокта үтә. 1951 йылдың 10 майына яровой культуралары, 1950 йылдың шул уҡ датаһына ҡарағанда, 15 процентҡа артыҡ сәселгән.

РСФСР-ҙың колхоздары, лесхоздары, урман үҫтереү станциялары һәм совхоздары 1951 йылдың 10 майына 513 мең гектар майҙанда йәки, 1950 йылдың 10 майына ҡарағанда, 44 мең гектарға артыҡ баҫыу һаҡлаусы урман полосалары ултыртыуҙы һәм ағас орлоҡтары сәсеүҙе башҡарҙылар.

III.

Совет Хөкүмәтенең һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының ҡарары буйынса 1951 йылдың 1 мартынан яңы, иҫәп буйынса дүртенсе, ваҡлап һатыу хаҡтарына арзанайтыу үткәреү нигеҙендә государство һәм кооператив сауҙаһында киң ҡулланыу аҙыҡ һәм промышленность тауарҙарын халыҡҡа һатыу байтаҡ артты.

Государство һәм кооператив сауҙа линияһы буйынса халыҡҡа тауар, сағыштырма хаҡтарҙа, 1950 йылдың 1 кварталына ҡарағанда, 22 процентҡа артыҡ һатылды.

РСФСР СТАТИСТИКА УПРАВЛЕНИЕҺЫ.

ПРОПАГАНДИСТӘРГӘ ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА

Һуғыштан һуңғы биш йыллыкта ауыр промышленность һәм тимер юл транспорты

СССР Государство план комитетенең һәм СССР Үҙәк статистика Управлениеһының Һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыктың үтәлеш йомғаҡтары тураһындағы белдереүе совет халҡының бөйөк еңеүен сағылдыра. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йомғаҡтарында большевиктар партияһы һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин етәкселегенең бөйөк аҡыллылығы, СССР халыҡтарының ижади хеҙмәт уңыштары, социалистик хужалыҡ системаһының капиталистик системаға ҡарағанда ғәйәт ҙур өҫтөнлөктәре айырыуса асыҡ яҡтыртыла.

Совет халҡы Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды уңышлы рәүештә үтәне һәм арттырып үтәне. Советтар Союзы коммунистик төҙөлештең иптәш Сталин тарафынан билдәләнгән бөйөк программаһын ғәмәлгә ашырыу юлында яңы ҙур аҙым яһаны. Биш йыллыҡтың уңыштары — СССР-ҙа коммунизмдең еңеүе эшенә совет халҡының яңы вклады ул.

* * *

Бөйөк Ватан һуғышының еңеүле тамамланыуы совет халҡына тыныс ижади эшкә башларға, үҙенең бөтә көстәрен һәм средстволарын һуғыштың ауыр эҙемтәләрен бөтөрөүгә йүнәлтергә мөмкинлек бирҙе.

Иптәш Сталин СССР-ҙың һуғыштан һуңғы үҫеш юлын гениаль рәүештә билдәләне. Ул совет халҡы алдына илебеҙҙең һуғыштан зарар күргән райондарын аяҡҡа баҫтырыу, промышленность һәм ауыл хужалығының һуғышҡа тиклемге кимәленә еләшеү һәм был кимәлдә байтаҡ күләмдә уҙып китеү бурысын ҡуйҙы. Биш йыллыҡ планда ауыр промышленносте һәм тимер юл транспортын беренсе нәүбәттә аяҡҡа баҫтырыу төп бурыс итеп ҡуйылды. Сөнки улар халыҡ хужалығының төп тармаҡтары булып торалар, уларҙан башҡа халыҡ хужалығының ҡалған бөтә тармаҡтарын аяҡҡа баҫтырыу мөмкин түгел.

Немец-фашист баҫҡынсылар промышленность өлкәһендә беҙгә ҙур зыян килтерҙеләр. Ваҡытлыса оккупацияланған территорияла улар 31 мең 800 предприятиене емерҙеләр, илебеҙҙең көньяғындағы металлургияны һәм күмер промышленноҫен бик ныҡ зарарланылар. Совет халҡы алдына тарихта бығаса күрелмәгән йылдам темптар менән ауыр промышленносте аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү бурысы килеп тыуҙы.

Биш йыллыҡ план ауыр промышленностең бөтә тармаҡтарын үҫтереүҙең грандиоз бурыстарын — металлургия һәм машина төҙөү заводтарын аяҡҡа баҫтырыуҙы һәм яңынан төҙөүҙе, күмер һәм нефть промышленноҫен күтәреүҙе, электрификацияланыуҙы бөтә яҡлап алға ебәреүҙе күҙҙә тотто.

Совет халҡы Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә, үҙ көстәренә һәм средстволарына ғына таянып, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында ғәйәт ҙур уңыштарға өлгәште, социалистик хужалыҡ системаһының капиталистик системаға ҡарағанда, ғәйәт ҙур өҫтөнлөктәрен бөтә донъяға демонстрацияланы.

Үткән биш йыллыҡ эсендә СССР-ҙың халыҡ хужалығына 708,1 миллиард һум акса һалынды, уларҙың күп кенә өлөшө промышленность төҙөлешенә тотолдо.

Беҙҙең илебеҙҙә төҙөлеш эштәренең темптары йылдан-йылға үҫә бара. СССР-ҙа беренсе биш йыллыҡта 1500 промышленность предприятиеһе, икенсе биш йыллыҡ осоронда — 4500 предприятие төҙөлдө, ә һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡ йылдарында 6 меңдән артыҡ промышленность предприятиеһе аяҡҡа баҫтырылды һәм яңынан төҙөлдө. Промышленность төҙөлешенең бындай темптарын бер генә капиталистик ил дә белмәй һәм белә лә алмай.

Яңы предприятиеларҙы киң күләмдә төҙөү һәм эксплуатацияға индереү арҡаһында бөтә промышленностең төп производство фондтары 1950 йылда, һуғышҡа тиклемге 1940 йылға сағыштырғанда, 58 процентҡа үҫте. Халыҡ хужалығында ғәйәт ҙур төҙөлеш эштәре алып барыу менән бергә, совет халҡы промышленностең валовой продукцияһын эшләп сығарыу буйынса биш йыллыҡ планды байтаҡ арттырып үтәне. Биш йыллыҡ планда Советтар Союзының бөтә промышленноҫенең продукцияһы 1950 йылда һуғышҡа тиклемге кимәлдә 48 процентҡа үтеп китергә тейеш, тип билдәләнгәйне. Ә, фактик алғанда, был кимәл 73 процентҡа уҙып китеүде. Промышленность биш йыллыҡ планды срогынан алда — 4 йылда һәм өс айҙа үтәлде. Промышленность продукцияһының күләме буйынса 1950 йылға биш йыллыҡ заданиеһе 17 процентҡа арттырып үтәлде.

Ҡара металлургия өлкәһендә биш йыллыҡ заданиеһе арттырып үтәлде. 1950 йылда ҡара металдар етештереү, 1940 йылға сағыштырғанда, биш йыллыҡ план менән ҡаралған 35 процент урынына 45 процентҡа артты. Суйын етештереү 29 процентҡа, ҡорос ирентеү 49 процентҡа, прокат эшләп сығарыу 59 процентҡа артты. Илебеҙҙең көньяғындағы металлургия промышленноҫе тулыһынса аяҡҡа баҫтырылды, хәҙер ул һуғышҡа тиклемгегә ҡарағанда, байтаҡ күберәк металл бирә.

Күмер һәм нефть промышленноҫендә лә биш йыллыҡ план байтаҡ арттырып үтәлде. 1950 йылда күмер сығарыу, һуғышҡа тиклемге кимәлгә сағыштырғанда, 57 процентҡа, нефть сығарыу 22 процентҡа артты. Электр энергияһы эшләп сығарыу, машиналар төҙөү, химия, урман, еңел, аҙыҡ-түлек промышленноҫе өлкәһендә лә задание арттырып үтәлде.

Илебеҙҙең индустрияһы, машиналар төҙөү, станоктар төҙөү, тракторҙар төҙөү өлкәһендә етештереүҙе арттырыу менән бергә, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарының техник яҡтан ҡоралланышын байтаҡҡа күтәрҙе. Үткән биш йыллыҡ эсендә ауыл хужалығы ғына 536 мең трактор, 93 мең комбайн һәм күп һанда башҡа ауыл хужалығы машиналары алды.

Партия һәм Совет хөкүмәте илебеҙҙең көнсығыш райондарында промышленносте бөтә яҡлап үҫтереүгә айырыуса иғтибар бирҙеләр. Көнсығыш райондарҙа һуғышҡа тиклемге кимәлдә прокат етештереү буйынса 2,5 тапҡырға, күмер сығарыу кимәлен 2 тапҡырҙан күберәккә үтеп киттеләр. СССР-ҙағы дөйөм нефть сығарыуҙа, көнсығыш райондарҙың удель ауырлығы 1940 йылға сағыштырғанда, 12 проценттан 44 процентҡа артты.

Беҙ быны Башҡорт АССР-ы миҫалында бик асыҡ күрәбеҙ. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда Башҡортостан промышленноҫе көслө темптар менән үҫте. 1950 йылда республикабыҙҙа промышленностең валовой продукцияһын эшләп сығарыу 1940 йылға сағыштырғанда 4 тапҡырға артты.

Металлургия промышленноҫе йылдам темптар менән үҫә. Суйын эшләп сығарыу, ҡорос, баҡыр иретеү бер нисә тапҡырға артты. Республикала промышленностең яңы тармаҡтары барлыҡҡа килде. Башҡортостан заводтарының маркаһы менән сығарылған машиналарҙы, электр оборудованиеларын, телефон аппараттарын бөтә илдә күрергә мөмкин.

Республикала машиналар төҙөү һәм металл эшкәртеү промышленноҫе ҙур урын алып тора, ул бөтә промышленность продукцияһының 50 процентынан күберәген тәшкил итә. 1913 йылға сағыштырғанда, промышленностең был тармаҡтарының продукцияһы 33 тапҡырҙан күберәккә артты, 1940 йыл кимәлен 7 тапҡырға уҙып китте.

Республикабыҙҙың нефть промышленноҫе айырыуса көслө темптар менән алға бара. Башҡортостан нефть республикаһы, Көнсығышта «Икенсе Баку»ҙың үҙәге булып өүерелде. Һуғышҡа тиклемге 1940 йылға сағыштырғанда нефть сығарыу һәм эшкәртеү бер нисә тапҡырға артты.

Республикала химия, урман һәм ағас эшкәртеү, аҙыҡ-түлек, күн эшкәртеү, аяҡ кейемдәре етештереү, киҙе-мамыҡ промышленноҫе һәм башҡалар уңышлы үҫә. Аҡыллы ленинса-сталинса милли политика арҡаһында, бөйөк рус халҡы ярҙамында Башҡортостан элекке артта ҡалған ярым колониаль илдән промышленность кимәле буйынса Советтар Союзының алдынғы республикаларының береһенә әүерелде.

* * *

Тимер юл транспорты халыҡ хужалығын үҫтереүҙең ҡеүәтле рычагы булып тора. Илдең бөтә экономикаһының үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндереү, йөк әйләнешенең өҙлөкһөҙ барыуын ғәмәлгә ашырыу өсөн тимер юл транспорты йылдам темптар менән үҫергә тейеш.

Һуғыш йылдарында немец-фашист баҫҡынсылары илебеҙҙең тимер юл транспортына ҙур зыян килтерҙеләр, 65 мең километр тимер юл линияһын, күп һанда тимер юл ҡоролмаларын — тимер юл станцияларын, күперҙәрҙе емерҙеләр, бик күп паровоздарҙы һәм вагондарҙы сафтан сығарҙылар.

Шуға күрә биш йыллыҡ план тимер юл транспортын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү буйынса ҙур масштабтағы эштәрҙе билдәләне. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында совет халҡы халыҡ хужалығының был мөһим тармағындағы ғәйәт ҙур емереклектәрҙе бөтөрөү буйынса байтаҡ уңыштарға өлгәште. Икенсе тимер юлдары, тимер юл станциялары һәм узелдары аяҡҡа баҫтырылды.

Яңы тимер юлдар төҙөлдө. Илебеҙҙең төньяғында һәм Урта Азияла күп тимер юлдар барлыҡҡа килде һәм, Уралда һәм Закавказьела тимер юлдары электрләштерелде.

Илебеҙҙең тимер юлдарында ҡеүәтле паровоздарҙың, электровоздарҙың, тепловоздарҙың, тауар һәм пассажир вагондарының, юл һәм тейәү-бушатыу машиналарының һаны һәр йыл һайын арта.

Социалистик хеҙмәттең яңы методтарын һәм яңы техниканы индереү һөҙөмтәһендә тимер юл транспорты йөк әйләнеше буйынса биш йыллыҡ заданиеһен 13 процентҡа арттырып үтәне. Тимер юлдарында тәүлеккә уртаса тейәү, 1940 йылға сағыштырғанда, 1950 йылда 121 процент тәшкил итте.

Совет тимер юлсылары үҙ эштәренең сифат күрһәткестәрен яҡшырттылар. Улар тимер юлының һәр бер километрын тулы файҙаланалар. Беҙҙең тауар вагоны, тәүлеккә Американыҡына ҡарағанда, байтаҡ артыҡ юл үтә. Беҙҙең илебеҙҙә тауар вагонының нагрузкаһы 1940 йылға сағыштырғанда 14 процентҡа күтәрелде, йөк поезының уртаса ауырлығы 10 процентҡа артты. Тауар вагонының тәүлеккә уртаса юл үтеүе һуғышҡа тиклемге кимәлдән 4,6 процентҡа юғары.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда пассажирҙарҙы йөрөтөүҙе яҡшыртыуға айырыуса иғтибар бирелде. Тимер юлдарында бик күп цельнометаллик комфортабелле вагондар йөрөй, бик күп курорт линияларын тиҙ йөрөшлө дизель поездар хеҙмәтләндерә, күп кенә пассажир поездары һәм вокзалдар яңы радио аппараттары менән йыһазландырылған.

Тимер юл транспорты, байтаҡ уңыштарға өлгәшкән хәлдә, тимер юлдарын, күпер һәм вокзалдарҙы аяҡҡа баҫтырыу һәм төҙөү буйынса биш йыллыҡ заданиене үтәп еткермәне. 1950 йылда вагондар әйләнеше биш йыллыҡ план менән ҡаралған кимәлгә өлгәшә алманы.

* * *

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда социалистик промышленностең һәм тимер юл транспортының характерлы һыҙаты йылдам техник прогрестан, промышленноҫҡа һәм транспортҡа алдынғы фән һәм техниканың яңы ҡаҙаныштарын киң индереүҙән тора. СССР-ҙың ғалимдәре, промышленностең алдынғы кешеләре, производство һәм транспорт новаторҙары менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итеп, күберәк камиллаштерелгән яңы машиналарҙы, станоктарҙы һәм башҡа промышленность оборудованиеларын булдырыуға өлгәштеләр.

Һөҙөмтәлә күп көс һалыуҙы талап иткән һәм ауыр эштәр механизациялаштырылды. Күмер промышленноҫенда күмерҙе ҡырҙыу, ватыу һәм ташыу процестарын механизациялаштырыу тамамланды. Илебеҙ инженерҙары тарафынан беренсе булып төҙөлгән күмер комбайны күмер сығарыуҙа ҙур эффект бирә. Металлургияла күп кенә производство процестары автоматлаштырылды, станоктарҙың ағым һәм автоматик линиялары булдырылды.

Юғары етештереүсәнлекле яңы машиналар һәм станоктар, промышленность һәм транспортты электрләштереүҙең үҫеүе — был коммунизмға күсеү өсөн кәрәк булған юғары техника булдырыу бурысын илебеҙҙең уңышлы үтәүенең асыҡ күрһәткесе.

Совет хөкүмәте фән һәм производстволарҙың алдынғы кешеләренең хеҙмәттәрен юғары баһаланы. Фән, техника һәм культура өлкәһендәге күренекле уңыштары өсөн һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ эсендә 6,5 мең кешегә Сталин премияһы лауреаты исеме бирелде.

Промышленностең бөтә тармаҡтарын техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу Ватаныбыҙ машиналар төҙөлешенән ныҡлы базаһында башҡарыла. СССР-ҙың машиналар төҙөү промышленноҫе үҙенең производство кимәлен 1940 йылға сағыштырғанда 2,3 тапҡырға арттырҙы. Яңы техник нигеҙҙә үҙгәртеп ҡоролған машиналар төҙөү заводтары элеккә камиллаштерелгән машиналарҙы һәм станоктарҙы ғына түгел, бәлки элек етештерелмәгән оборудованиеларҙы эшләп сығарыуҙы ла үҙләштерҙеләр.

Халыҡ хужалығында техник прогрестең, эшселәрҙең, инженерҙарҙың һәм техниктарҙың квалификацияларының һәм ижади инициативаларының күтәрелеүе базаһында, 1950 йылда хеҙмәт етештереүсәнлеге 1940 йылға сағыштырғанда 37 процентҡа күтәрелде.

Совет халҡы Волгала һәм Днепрҙа донъяла иң бөйөк гидроэлектростанцияларҙы, Төп Төркмәнстан каналын, Көньяҡ Украина һәм Төньяҡ Ҡырым каналдарын ҡороуға тотондо, Волга—Дон каналын төҙөүгә ҡайтанан башланы. Фән һәм техниканың ғәйәт ҙур ҡаҙаныштары, һәм совет кешеләренең хеҙмәт активлектәрәнең үҫеүе һөҙөмтәһендә коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре тыҫҡаса срокта — 5—7 йыл эсендә төҙөлөп бөтәсәктәр.

Коммунизм төҙөлештәрендә ер-яңы механизмдар һәм техник средстволар ҡулланыла. Айырыуса күп көс һалыуҙы талап иткән ер эштәре махсус снарядтар һәм үҙ йөрөшлө экскаваторҙар ярҙамында башҡарыла. Был махсус снарядтарҙың береһе генә 35 мең ер ҡаҙыусының һәм балсыҡ ташыу өсөн кәрәкле булған 12 мең аттың эшен алыштыра.

Үткән биш йыллыҡ эсендә совет халҡының промышленность һәм тимер юл транспорты өлкәһендә өлгәшкән уңыштары социалистик ҡоролоштоң бөтмәс-төкәнмәс тормош көсө, уның, ғүмере бөткән капитализмға ҡарағанда, бөйөк өҫтөнлөктәре тураһында һөйләйҙәр. Совет ҡоролошо беҙҙең халҡыбыҙҙың бөйөк ижади көстәрен уятты. СССР хеҙмәтсәндәре һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты срогынан алда үтәү өсөн бөтә халыҡ социалистик ярышын киң йәйелдерҙеләр. Ул яңы юғары баҫҡысҡа күтәрелде. Социалистик ярыш яңы формалар менән байытылды. Промышленносте һәм тимер юл транспортын техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу нигеҙендә стахановсы новаторҙар яңы техник нормалар урынлаштырҙылар. Айырым стахановсыларҙың тәжрибәләрен таратыуҙан хеҙмәттең айырыуса камиллаштерелгән алымдарын предприятиелар һәм промышленностең тотош тармаҡтары масштабтарында ғилми дөйөмләштереүгә күсеү ғәмәлгә ашырыла.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды тормошҡа ашырыу өсөн көрәштә еңеү совет халҡын яңы хеҙмәт подвигтарына рухландырҙы. Социалистик ярыш нигеҙендә промышленность эшсәндәре 1951 йылдың I квартал планын валовой продукция эшләп сығарыу буйынса 102 процентҡа үтәнеләр.

Совет халҡы алдында тарихи бурыс — коммунизм өсөн көрәштең сталинса программаһын ғәмәлгә ашырыу бурысы тора. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды уңышлы үтәү коммунизм төҙөүҙең сталинса программаһын тормошҡа ашырыу темптарын тиҙләтеүгә ныҡлы база һалды. Был төҙөлештә ауыр промышленность һәм тимер юл транспорты күренекле урынды алып тора һәм киләсәктә лә алып торасаҡ.

Д. Фөнляев,

ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты лекторы.

СССР Сит Ил Эштәре Министерствоһында

Ошо йылдың 7 майында СССР Сит Ил Эштәре Министрының Урынбаҫары А. Е. Богомолов АҠШ-тың СССР-ҙағы посолы А. Кэрк әфәндегә «Япония менән Тыныслыҡ Договорының АҠШ проекты айҡанлы СССР Хөкүмәтенең иҫкәртмәләрен» тапшырҙы.

Түбәндә был документтең тексы иғлан ителә.

«ЯПОНИЯ МЕНӘН ТЫНЫСЛЫҠ ДОГОВОРЫНЫҢ АҠШ ПРОЕКТЫ АЙҠАНЛЫ СССР ХӨКҮМӘТЕНЕҢ ИҪКӘРТМӘЛӘРЕ.

СССР Хөкүмәте ошо йылдың 29 мартында Америка Ҡушма Штаттары Хөкүмәтенән Япония менән Тыныслыҡ Договорының проектын алды. Был айҡанлы Совет Хөкүмәте түбәндәге иҫкәртмәләрҙе яһауҙы кәрәкле тип иҫәпләй.

Япония менән һуғыш тамамланғандан һуң биш йылдан артығыраҡ ваҡыт үтеп китеүгә ҡарамаҫтан, Япония өсөн тыныслыҡ урынлаштырыу тураһындағы мәсьәлә хәл ителмәйенсә ҡала. Бындай хәл, бөтәһенән элек, тыныслыҡ договорын төҙөүҙе генә түгел, бәлки уны әҙерләүҙе лә төрлө һылтауҙар аҫтында киҫектереүсе АҠШ Хөкүмәте тарафынан алынған позиция һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде. Шул уҡ ваҡытта АҠШ Хөкүмәте, тейешле халыҡ-ара килешеүҙәр менән күҙҙә тотолғанынса, башҡа хөкүмәттәр менән берлектә Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләү тураһында Совет Хөкүмәтенең тәҡдимдәрен бер нисә тапҡыр кире ҡаҡты. Һөҙөмтәлә сит ил ғәскәрҙәренең Японияны оккупациялауы юл ҡуйылғыһыҙ дәрәжәлә һуҙылды.

1. Совет Хөкүмәтенең иҫкәртмәләре, бөтәһенән элек, Япония менән тыныслыҡ договорын дөрөҫ әҙерләмәүгә ҡағылалар.

Япония менән тыныслыҡ договорының Америка проекты менән бергә ебәргән меморандумда АҠШ Хөкүмәте, күрһәтелгән проект АҠШ Хөкүмәтенең вәкилдәре менән күп кенә башҡа государстволар, шул иҫәптән Советтар Союзы Хөкүмәтенең вәкилдәре араһында фекерҙәр менән алмашҡандан һуң төҙөлдө, тип белдерә. Шуны билдәләргә кәрәк, АҠШ Хөкүмәтенен был һүҙе дөрөҫ түгел, сөнки Совет Хөкүмәте Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләүгә ҡарата АҠШ вәкилдәре менән сепарат һөйләшеүҙәрҙән баш тартыуы тураһында ошо йылдың март башында уҡ белдереү иғлан иткәйне. Шул уҡ ваҡытта Совет Хөкүмәте ошондай хәлдән сығып эш итте, Япония менән тыныслыҡ договорын төҙөү ниндәй ҙә булһа бер хөкүмәттең генә эше һәм башҡа ҡыҙыҡһынған хөкүмәттәрҙең фекерҙәрен һорауҙы үткәреү генә булып торһай, ә тейешле халыҡ-ара килешеүҙәр менән күҙҙә тотолғанынса, бөтә был хөкүмәттәрҙең берләшән үткәрелгән эше булырға тейеш. Шуға ҡарамаҫтан, АҠШ хөкүмәте тыныслыҡ договорын әҙерләү хоҡуҡын тик үҙенә генә үҙләштерергә ынтылып, Япония менән тыныслыҡ договорын сепарат әҙерләүҙән баш тартманы, был, СССР, Ҡытай һәм Великобритания менән берлектә, башҡа ҡыҙыҡһынған государстволар ҡатнашлығында, Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләү тураһында үҙе тарафынан алынған йөкләмәләрҙе боҙоу булып тора.

1945 йылдың 2 августындағы Потсдам килешеүенә ярашлы рәүештә биш державаның — АҠШ, СССР, Ҡытай, Великобритания һәм Францияның Сит Ил Эштәре Министрҙәре Советы расланды, шул уҡ ваҡытта Потсдам килешеүендә, Сит Ил Эштәре Министрҙәре Советы, беренсе нәүбәттә «тыныслыҡ урынлаштырыу буйынса әҙерлек эштәре» өсөн төҙөлә һәм тейешле тыныслыҡ договорҙарын төҙөгән ваҡытта «советтең составы ошо бурыс ҡағылған дошман государствоһына ҡарата капитуляция шарттарына ҡул ҡуйған государстволарҙы тәшкил итеүсе члендарҙан торасаҡ», тип туранан-тура әйтелгән. Быға ярашлы рәүештә Италия, Румыния, Венгрия, Болгария һәм Финляндия менән тыныслыҡ договорҙары әҙерләнде һәм төҙөлдө. Юғарыла әйтелгән Потсдам килешеүенән шулай уҡ Япония менән тыныслыҡ договорын төҙөү АҠШ-ҡа, СССР-ға, Ҡытайға һәм Великобританияға йөкмәтелгәнлеге күренә. Билдәле булыуынса, улар Японияның капитуляция акты тураһындағы Актҡа ҡул ҡуйғайнылар. 1947 йылда уҡ Совет Хөкүмәте Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләүҙе башлау өсөн Ҡытай, АҠШ, СССР һәм Великобритания вәкилдәре составында сит ил эштәре Министрҙәре Советының махсус сессияһын саҡырырға тәҡдим иткәйне. Шул уҡ ваҡытта Японияға ҡаршы һуғышта үҙҙәренең ҡоралды көстәре менән ҡатнашҡан бөтә государстволарҙы ла Япония менән тыныслыҡ договорын төҙөү буйынса әҙерлек эшенә йәлеп итеү күҙҙә тотолғайны. Ләкин был тәҡдим дә, Совет Хөкүмәтенең Япония менән тыныслыҡ договорын төҙөүҙе тиҙләтеүгә йүнәлтелгән бер нисә тапҡыр яһалған башҡа тырышлыҡтары кеүек үк, ниңәй һөҙөмтәләр бирмәнеләр, сөнки АҠШ Хөкүмәте Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләү өсөн сит ил эштәре Министрҙәре Советын саҡырыу кәрәклеген, шулай уҡ был договорҙы ҡарау өсөн тыныс конференцияны саҡырыуҙы ла кирә ҡаҡты.

Совет Хөкүмәте Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләүҙә Ҡытайҙы ситләтеүҙең юл ҡуйылмаҫлыҡ булыуын айырыуса күрһәтеп үтеүҙе кәрәкле тип иҫәпләй. Билдәле булыуынса, Ҡытай күп йылдар буйына милитаристик Японияның ҡаты агрессияһына дусар ителде, япон империализмына ҡаршы оҙаҡ дауам иткән ауыр һуғыш алып барҙы һәм Япония агрессияһынан иң ҙур ҡорбандар кисерҙе. Шуға күрә Ҡытай халҡының берҙән-бер законлы вәкиле булып торған Ҡытай Халыҡ Республикаһы Хөкүмәтенең Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләүҙә һәм Алыҫ Көнсығышта ныҡлы тыныслыҡ урынлаштырыуҙа айырыуса ҡыҙыҡһыныуы тәбиғи. Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләү буйынса эштәрҙә Ҡытай Халыҡ Республикаһының ҡатнашыуынан башҡа Алыҫ Көнсығышта ысын тыныслыҡты яйға һалыуҙың мөмкин булмауы бәтенләйгә асыҡ.

Бынан Ҡушма Штаттар Хөкүмәтенең Япония менән тыныслыҡ договорын әҙерләүҙән СССР-ҙы, Ҡытай Халыҡ Республикаһын һәм башҡа илдәрҙе алып ташларға һәм Японияның хәҙерге хөкүмәтенең Америка оккупацион властарынан бойондороҡло булыуын файҙаланып, был договорҙың АҠШ Хөкүмәтенә ярашлы шарттарын диктат тәртибендә Японияға бер яҡлы көсләп тағыу өсөн ошо эште тик үҙ ҡулдарына ғына алырға ынтылыуы күренә.

2. Совет Хөкүмәтенең иҫкәртмәләре, икенсенән, шуға ҡағыла, Япония менән тыныслыҡ договорының Америка проектында, эштең асылына ҡараған ваҡытта, державалар араһында булған килешеүҙәр менән уртаҡлығы булмаған күп кенә дөрөҫ булмаған положениелар бар.

1943 йылғы Каир декларацияһы, 1945 йылғы Потсдам декларацияһы һәм 1945 йылғы Ялта килешеүе кеүек билдәле халыҡ-ара документтарҙа Америка Ҡушма Штаттары, Великобритания, Ҡытай һәм СССР Хөкүмәттәре Япония менән буласаҡ тыныслыҡ договорына ҡарата билдәле йөкләмәләр алғайнылар.

Был документтарҙа Японияның территориаль сиктәре билдәләнелгән һәм, Японияла «япон халҡының ирекле рәүештә кәүҙәләндерелгән ихтыярына ярашлы рәүештә тыныс настроениелы булған һәм яуаплы хөкүмәт» йәшәргә тейеш, унан һуң оккупацион ғәскәрҙәр Японияны сығарылырға тейеш, тип күрһәтелгән.

Был документтарҙа, шулай уҡ державаларҙың артабанғы килешеүҙәрендә, Японияла «япон халҡы араһында демократик тенденцияларҙы ҡайтанан тыуҙырыу һәм нығытыу юлындағы бөтә кәртәләрҙе бөтөрөргә» кәрәк һәм илдең тыныс экономикаһын үҫтереү өсөн киң мөмкинлектәр асылырға тейеш, тип әйтелә. Унда шуның менән бергә милитаристар власен һәм йоғонтоһон бөтөрөү һәм Японияны демилитаризациялауҙы тормошҡа ашырыу кәрәклеге тураһында әйтелә.

Япония менән тыныслыҡ договорының Америка проекты юғарыла әйтелгән документтарҙан сыҡҡан державаларҙың был йөкләмәләрен теге йәки был дәрәжәлә ситләтеп үтә.

Бөтәһенән элек, был территория мәсьәләләре тураһында әйтергә кәрәк.

Мәҫәлән, 1943 йылғы Каир декларацияһында, Тайвань утрауы һәм Пескадор утрауҙары Ҡытайға кире ҡайтарылырға тейеш, тип туранан-тура әйтелә. Ә Америка проектында, Япония Тайвань һәм Пескадор утрауҙарына булған бөтә хоҡуҡтарҙан баш тарта, тип кенә әйтелә, ләкин Тайванды һәм Пескадор утрауҙарын Ҡытайға биреү тураһында бер нәмә лә өндәшелмәй. Бынан шундай һығымтаны яһарға мөмкин, фактик алғанда, был утрауҙарҙы Ҡытайға кире ҡайтарып биреү тураһындағы Каир килешеүен боҙоп, Ҡытайҙан айырылып алынған Тайвань һәм Пескадор утрауҙары менән булған хәҙерге хәлдә проект үҙгәртмәйенсә ҡалдыра.

Америка проекты унан ары Рюкю, Бонин, Розарио, Волкано, Парес Вела һәм Маркус утрауҙарын Япония суверенитетенән алыуҙы һәм уларға йәнәһе Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының опекаһын урынлаштырыу һылтауы аҫтында уларҙы АҠШ идараһына тапшырыуҙы күҙҙә тота. Ләкин юғарыла әйтелгән утрауҙарҙы Япониянан тартып алыуҙы державалар араһындағы килешеүҙәр менән дә, Именселек Советы йәиһә БМО ҡарарҙары менән дә күҙҙә тотолмау айҡанлы бындай тартып алыу бер нәмә менән дә аҡланылмай.

Хәрби мәсьәлә буйынса Япония менән тыныслыҡ договорының Америка проектында булған юғарыла әйтелгән халыҡ-ара килешеүҙәрҙән сигенеүҙәр тағы ла ҙурыраҡ әһәмиәткә эйә булып торалар. Шуны ла әйтеү етә, Америка проектында япон милитаризмен аяҡҡа баҫтырыуға ҡаршы гарантия булмау ғына түгел, бәлки Япония ҡоралды көстәренең күләменә ҡарата ғөмүмән бер ниндәй ҙә сикләүҙәр ҡуйылмай.

Билдәле булыуынса, икенсе бөтә донъя һуғышында Япония менән бергә төп агрессорҙарҙың береһе булған Италия менән тыныслыҡ договорында Италия армияһының контингентына, хәрби-диңгеҙ флоты личный составының һанына, шулай уҡ хәрби-һауа көстәре һанына асыҡ сикләүҙәр бар. Шул уҡ ваҡытта Америка проектында Япония ҡоралды көстәренә бер ниндәй ҙә сикләү юҡ. Япония, шулай итеп, гәрсә быныһ өсөн бер ниндәй нигеҙлектәр булмаһа ла, Италияға сағыштырғанда, өҫтөнөрәк хәлгә ҡуйылған. Бынан шул күренә, Япония «үҙ-үҙен обороналау» тип аталған нәмә өсөн үҙенән ҡоралды көстәренең күләме тураһындағы мәсьәләне үҙе хәл итәсәк. Совет Хөкүмәте, был, Японияға милитаризмды аяҡҡа баҫтырырға рөхсәт итеү менән бер тигеҙ, тип иҫәпләй. Бындай хәлдән Японияны демилитаризациялау тураһында державаларҙың билдәле килешеүҙәре менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булмауы аңлашыла.

Америка проектының Японияның оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыуҙың бер ниндәй ҙә срогтарын билдәләмәүе һәм ярашыу договоры төҙәшкәндән һуң да Американың оккупацион ғәскәрҙәрен һәм хәрби базаларын Японияла ҡалдырыуға туранан-тура иҫәпләнгән булыуы фактынан ситләтеп үтеү мөмкин түгел. Тимәк, Япония өсөн Ҡушма Штаттар әҙерләгән «тыныслыҡты яйға һалыуҙан» һуң да Япония[illegible] оккупациялау бөтөрөлмәй һәм Я[illegible] фактик хужа булып Америка [illegible] Штаттары ҡаласаҡтар.

Билдәле булыуынса, Италия [illegible] ярашыу договорында ярашыу [illegible] төҙөлгәндән һуң өс ай срокта оккупацион ғәскәрҙәрҙе Италиянан сығарыу тотолған. Шулай итеп, Италия [illegible] ғыштырғанда, Япония иң насар [illegible] әләгә, ә АҠШ Япония менән яраш[illegible] ҡул ҡуйғандан һуң Японияны с[illegible] гән срокта оккупациялау өсөн си[illegible] гән хоҡуҡ алалар. Быларҙың бөтә[illegible] 1945 йылғы Потсдам декларацияһ[illegible] нән һис тә ярашлы булмауы [illegible] шыла.

Быға шуны өҫтәргә кәрәк: хә[illegible] ҡытта уҡ инде АҠШ Хөкүмәте [illegible] ғәскәрҙәренең Японияны оккупац[illegible] капитуляция тураһындағы акты[illegible] ҡуйған государстволар араһында [illegible] шелгән маҡсаттарҙа файҙаланмай[illegible] ния территорияһында булған [illegible] оккупацион ғәскәрҙәре Японияның [illegible] торияһын, уның материаль һәм [illegible] сурстарын Кореяға ҡаршы ҡорал[illegible] тервенция өсөн файҙаланалар, был [illegible] ка ғәскәрҙәренә Японияны оккупа[illegible] хоҡуҡын Японияны демилитариза[illegible] һәм демократизациялау сараларын [illegible] ашырыу маҡсаттарында ғына [illegible] халыҡ-ара килешеүҙәр менән бергә [illegible] ны алмай.

Аҙаҡ килеп, Америка проекты Япо[illegible] ның тыныс экономикаһын ирек[illegible] реүҙән сикләүҙәрҙе алыу кәрәклеген [illegible] ға һуҡмай. Илдең тыныс экономик[illegible] үҫтермәйенсә һәм башҡа илдәр [illegible] нормаль сауҙаны булдырмайынса Япо[illegible] ның экономик күтәрелеше һәм япо[illegible] ҡының етеш көн-күрешен үҫтереү [illegible] ышаныслы нигеҙ булдырыу мөмкин [illegible] гел икәнлеге аңлашыла.

Договор проектына ҡарата Совет [illegible] күмәтенең башҡа замечаниелары ла [illegible] ул уларҙы ҡыҙыҡһыныусы держава[illegible] ҙың кәңәшмәһендә һөйләү кәрәк [illegible] иҫәпләй.

3. Япония менән ярашыу догово[illegible] тиҙерәк төҙөүҙе өҙлөкһөҙ талап [illegible] Совет Хөкүмәте, тыныслыҡ догов[illegible] державалар араһында икенсе бөтә [illegible] һуғышы осоронда төҙөлгән халыҡ-ара [illegible] лешеүҙәр нигеҙендә әҙерләнергә те[illegible] һәм договор проектын әҙерләү АҠШ, Ҡ[illegible] тай Халыҡ Республикаһы, СССР һәм Вели[illegible] кобритания вәкилдәре менән бергә[illegible] был эшкә Алыҫ Көнсығыш комисс[illegible] ның члендары булған бөтә государст[illegible] ларҙы йәлеп итеп башҡарылырға тей[illegible] тип иҫәпләй.

Ошоға ярашлы рәүештә Совет Хөк[illegible] түбәндәгеләрҙе тәҡдим итә:

Беренсе. 1951 йылдың июнендә [illegible] июлендә АҠШ, Ҡытай, Великобрита[illegible] һәм СССР вәкилдәре составында Япо[illegible] менән ярашыу договорын әҙерләүгә [illegible] лау өсөн сит ил эштәре Министр[illegible] Советының сессияһын саҡырырға, Япо[illegible] менән ярашыу договорын төҙөү буйы[illegible] әҙерлек эштәренә үҙҙәренең ҡорал[illegible] көстәре менән Японияға ҡаршы һуғыш[illegible] ҡатнашҡан бөтә государстволарҙың [illegible] килдәрен йәлеп итеүҙе күҙҙә тотоп, яр[illegible] шыу договорының проектын ярашыу [illegible] ференцияһы ҡарамағына тапшыр[illegible] өлгәшергә.

Икенсе. Япония менән ярашыу [illegible] ворын әҙерләүҙә, түбәндәге төп маҡ[illegible] тарҙы ҡулланып, Каир декларацияһ[illegible] Потсдам декларацияһы һәм Ялта килеш[illegible] нигеҙендә алып барырға:

а) Япония тыныслыҡ һөйөүсе, [illegible] кратик, бойондороҡһоҙ государство бул[illegible] әүерелергә тейеш;

б) Япония халҡына демократик [illegible] хоҡуҡтар тәьмин ителергә тейеш һәм [illegible] лия менән ярашыу договорында күҙҙә [illegible] тотолғанынса, халыҡты уның демокра[illegible] хоҡуҡтарынан мәхрүм итеүҙе маҡ[illegible] итеп ҡуйған политик, хәрби йәки [illegible] биләштерелгән ойошмаларҙың йәшәү[illegible] юл ҡуйылмаҫҡа тейеш;

в) япон милитаризмының аяҡҡа [illegible] уына ҡаршы гарантия сифатында [illegible] ворҙа япон хәрби көстәренең күләм[illegible] улар, Италия менән ярашыу договор[illegible] билдәләнгәнсә, үҙен обороналау талап[illegible] рынан артмаҫлыҡ итеп, сикләү ҡуйыл[illegible] ға тейеш;

г) тыныс экономиканы үҫтереү [illegible] Японияға бер төрлө лә сикләүҙәр ҡуй[illegible] май;

д) Японияның башҡа государст[illegible] менән сауҙа итеүенә ҡарата һәр [illegible] сикләүҙәр бөтөрөлә.

Өсөнсө. Договорҙа Япония, милит[illegible] тик Японияға ҡаршы һуғышта [illegible] ҡоралды көстәре менән ҡатнашҡан [illegible] дарстволарҙың береһенә ҡаршы ваҡыт[illegible] гән коалицияға инмәйәсәк, тип [illegible] ларға.

Дүртенсе. Договорҙа Япония менән [illegible] шыу договоры төҙәшкәндән һуң бер [illegible] дан да артыҡ булмаған ваҡыт [illegible] Япония территорияһынан бөтә оккуп[illegible] ғәскәрҙәр сығарыла һәм Японияла [illegible] генә сит ил государствоһы ла ғә[illegible] һәм хәрби базалар тотмаясаҡ, тип [illegible] билдәләргә.

Бишенсе. Япония менән ярашыу [illegible] ворын төҙәгән государстволарҙың Бер[illegible] кән Милләттәр Ойошмаһына Япон[illegible] инеүен яҡлаясаҡтары тураһында [illegible] шеп килешергә.

Мәскәү, 1951 йыл 7 май».

Юғарыла килтерелгән документтең [illegible] пиялары шулай уҡ Ҡытай Халыҡ Рес[illegible] ликаһы, Великобритания, Франция, [illegible] дия, Пакистан, Бирма, Австралия, [illegible] да, Новая Зиландия, Голландия, Мон[illegible] Халыҡ Республикаһы һәм Корея Халыҡ [illegible] мократик Республикаһы хөкүмәтт[illegible] лә ебәрелде.

Бөйөк рус металлургы

(П. П. Аносовтың үлеүенә йөҙ йыл тулыуға ҡарата)

Бөйөк рус металлургы Павел Петрович Аносовтың үлеүенә йөҙ йыл тулды. Уға рус сифатлы ҡорос етештереү, ҡорос етештереүҙең фәнни нигеҙҙәрен үйлап табыу буйынса уның эштәре Ватан металлургияһын үҫтереү тарихында яңы осорҙо башлаған.

Павел Петрович Аносов 1797 йылда Петербургта тыуҙы. 1817 йылда ул тау инженерҙәре корпусы институтын отличие менән тамамлай һәм Златоуст казенный заводтарына эшкә [illegible].

[illegible] Уралдың [illegible] менән танышлығы һәм Златоуст [illegible] П. П. Аносов [illegible] рудалары һәм [illegible] металлургия [illegible] геология тикшеренеүҙәр үткәрә.

Ул массовый [illegible] тәү юлы менән [illegible] алтынды айырып алыу ысулын эшләне, промышленность [illegible] алтын [illegible] машиналар үйлап тапты. Аносов ул ваҡытта алтын приискаларында [illegible] машиналары менән беренсе тапҡыр алмаштыра башланы.

Юғары сифатлы ҡорос алыу процессын тикшереү һәм эшләү буйынса хеҙмәттәр П. П. Аносов эшмәкәрлегенә үҙәк урынды алып торалар.

Был өлкәлә Аносовтың эштәре Россия [illegible] етештереү [illegible] осорға ҡайтып ҡала. Был ваҡытта Урал [illegible] металлургия [illegible] булараҡ, Ватаныбыҙҙа етештерелгән бөтә суйындың 84 процентын тупланы ине.

Крепостнойлыҡтың ауыр шарттары һәм батша Рәсәйенең техника яғынан артта ҡалыуы промышленностең үҫешен ҡамасаулай ине. Айырым талантлы мастерҙәрҙең [illegible].

П. П. Аносов [illegible] юғары сифатлы ҡорос алыуҙың яңы [illegible] 1828 йылда ул [illegible].

Беҙҙең заман [illegible] юғары [illegible] тиглдәр етештереү бурысын уңышлы хәл итте. Бөтә донъяла ҡорос тимерҙән цементлаштырылған киҫәктәрен тиглдәрҙә иретеү юлы менән алынған ваҡытта, Аносов тимерҙе тиглдә туранан-тура цементлаү юлы менән ҡо-

йолған ҡорос алыу ысулын асты. Шул уҡ ваҡытта ул цементлау ысулын асты һәм яңы ысул — газ цементлаштырыуын табып, был өлкәлә ул Көнбайыш Европа ғалимдарын байтаҡ уҙып китте.

Аносовтың иждат инициативаһы, ул [illegible] «ғәрәттеү ҡоросҡа ҡарағанда» тағы ла ныҡлыраҡ һәм үткерерәк һәм металл үйлап табыуға, «ҡоросто камиллаштырыуға» өлгәшеүгә йүнәлтелгәйне.

Хәҙерге Көнсығышта юғары сифатлы ҡоростан эшләнгән булаттар дан тота инеләр. Ләкин уларҙы етештереү сере күп быуаттарҙан бирле юғалған булып сыҡты.

Булаттың серен табыуға тырышып, П. П. Аносов төрлө элементтарҙың: марганец, хром, титан, көмөш, алтын, платина һәм кислородтың ҡоросто юғары сифатлы-

ҡа йоғонтоһон тикшерҙе. Ул [illegible] матдәләрҙең [illegible] графит һәм [illegible] металл [illegible].

Күп һанлы тәжрибәләр нигеҙендә Аносов, булат ҡорос алыу өсөн тимергә туранан-тура графит менән иретеү [illegible].

Был ысулды файҙаланып, [illegible] булаттарҙың [illegible]. 1828 йылда ул [illegible] П. П. Аносов булаттарҙың [illegible].

П. П. Аносов булаттар серен асҡандан һуң [illegible].

Теорияны практика менән [illegible].

Совет халҡы П. П. Аносов хеҙмәттәрен юғары баһалай. 1948 йылда СССР Министрҙар Советы П. П. Аносовтың [illegible].

А. М. Самарин,

СССР фәндәр Академияһының техник фәндәр Бүлегенең техника тарихы буйынса Комиссияһы председателе, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденты.

ЙӘШЕЛ ПОЯС

I.

Тарантасҡа үҫентеләр һалып,
Бер йылғыр ат алып ҡулына,
Тау үткәндә йәш колхозсы Халиҡ
Ҡалҡыулыҡҡа баҫыу юлынан, —
Ял ҡылынан ҡамсы үрә ине
Шаян иҫкән көҙгө ҡоро ел.
Халиҡ: — Эх, ер дымһыҙ, көлдәй, — тине.
Ләкин бойоҡманы шат күңел.
Сөнки егет белә арбаһында
Ҡиммәтле йөк, ҙур көс килеүен, —
Ә шул көстөң бер нисә йылдан һуң
Шомло елде тамам еңеүен.
Һаман күҙ алдында: барып еткәс
Халиҡ төшә ерҙең башына.
Киң көрәктәр тупраҡты һелкеткәс,
Үҫентеләр баҫты ҡаршыға.
Һәр көмлөң битенән тирҙәр тамды,
Ауыр көйөм һалып ташланды.
Бригадала ҡоролоҡҡа ҡаршы
Бөсле һөжүм шулай башланды.

II

...Берҙәм ятлағанда унар көрәк
Һәм эшсән ҡыҙҙарҙың ҡулдары,
Яҫсы түҙһеҙ егеттәге йөрәк, —
Бара ине Халиҡ әҙ һалып.
Уң ҡулында ер үлсәүгес ине,
Маркер тигән нәмә — һулында.
Бригадир: — Беҙҙең тирҙәр, — тине, —
Мәңге ҡалыр ошо урында.
— Сөнки бында, тирҙәр тамған ерҙә
Үтә алмаҫ көслө елдәр ҙә.
Ҡояш көсө еткәс күтәрергә
Дымды полосалы ерҙәрҙән.

III

Шул ваҡыттан алып көҙ ҙә, яҙ ҙа
Ҡайын, имән, тополь, юкәләр
Елдең юлын ҡаплап баҫыуҙарҙа
Тереләшеп алға үтәләр.
Һәм рәттәрҙә үҙ урынын ала
Акация, тал да, сәғәндәр.
Улар хәҙер гүйә ҡул бирәйҙәр
Тыныс йәштәр үтеп барғанда.
Йәштәр күрә быны, ҡыҙҙар белә
Ағастарҙың уның яулауын.
Япраҡтарға ҡарап ҡояш көлә,
Халыҡ тыңлай урман шаулауын.

IV

Дошман яуын тамам ҡыйратырға
Китеп барған көслө отрядтай,
Ялан яҡтарҙағы һәр бер ҡырҙа
Һуҙылғандар йәшел рәттәр.
Йәш ағастар шаулап үҫкән һайын,
Эреләнгән һайын япраҡтар
Баҫыуҙарҙа иген оҙонайа,
Һалмаҡлана һаман башаҡтар;
Бойҙай буйы бил быуырлыҡ була
Күрше-тирә бесән саппанда,
Йәш урманға һандуғастар ҡуна
Һайрар өсөн ал таң атҡанда.
Сөнки елдәр үтә алмай унда,
Ғәйеҙ хәҙер баҫыу буйҙары:
Йәшел пояс булып яландарға
Үтә юлбашсының уйҙары.

Ф. Ғималетдинов.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Ни өсөн механизм файҙаланылмай?"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 73-сө номерында «Ишембайнефть» тресының монтаж-төҙөлөш контораһының шлако-блок етештереү эшен механизациялаштырыуға иғтибар бирмәүе тураһында хәбәр баҫылғайны.

ВКП(б)-ның Ишембай ҡала комитеты редакцияға, монтаж-төҙөлөш конторахының эшмәкәрлегенә ҡарата «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған тәнҡиттең бик урынлы һәм ваҡытлы булыуы, был етешһеҙлекте бөтөрөү буйынса саралар билдәләнгәнлеге тураһында хәбәр итте. Шлако-блок эшләп сығара торған установканы тиҙ арала ремонтлап хужа ебәреү өсөн практик эш алып барыла. Шул уҡ ваҡытта 1951 йыл эсендә ҙур шлако-блок установкаһы төҙөү эше планлаштырылған.

Һүрәттә: Өфө нефть эшкәртеү заводы управлениеһенең скверендә.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Станок-ҡачалкалар өсөн яңы ҡулайлаштырыу

Октябрьский. Беренсе номерлы промыселдың беренсе участкаһында ер өҫтө оборудованиелары, башлыса, 10—13-әр йыл эшләтелгән станок-ҡачалкаларҙан тора. Шуға ҡарамаҫтан, участка коллективы, Октябрьский нефтселәренең иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе үтәүҙә социалистик ярышты киң йәйелдереп, станоктарҙың хеҙмәт итеү срогын ике-өс тапҡырға оҙайтты.

Участка мастеры Завьялов, өлкән операторҙар Шилов, Ильятуллин, Мельников һәм башҡа күп иптәштәр оборудованиеларҙы эксплуатациялауҙы яҡшыртыу, уларҙың хеҙмәт итеү срогын оҙайтыуҙа ҙур эш башҡарҙылар. Уларҙың мөһим сараларының береһе — оборудованиеларҙың ашалған частарының майлау системаһын яҡшыртыу булды.

Элек станок-ҡачалкалар частарының ватылыуы, күберәк, Галль сынйырҙарының өҙөлеүенән килеп сыға ине. Шуға күрә участка работниктары Галль сынйырҙары өҙөлгән ваҡытта станоктарҙы автоматик рәүештә туҡтатыу өсөн махсус ҡулайлаштырыу яһанылар. Станок-ҡачалкаларҙың ватылыуы бөтөрөлдө.

Урал металлургтарының яңы башланғысын хуплап, беренсе участка нефтселәре, яңы станоктар алмайынса, булған оборудованиелар менән эшләргә ҡарар иттеләр. Бынан башҡа, улар, ташланған деталдарҙан биш станок-ҡачалка йыйнап, эшләмәүсе биш скважинаны хәрәкәткә ебәрҙеләр.

И. Болдогоев.

Эреләтелгән колхозда

Ҡырмыҫҡалы районының Мичурин исемендәге ауыл хужалығы артеле хәҙер көндән-көн нығый һәм үҫә. Вак хужалыҡтарҙы берләштергәндән һуң быйылғы сәсеү майҙаны 2114 гектарға етте. Хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде.

Эреләтелгән колхоздың тәүге яҙғы сәсеүе ойошҡанлыҡ менән үтте. Сәсеүлектәрҙең сығышы яҡшы. Сөнки яҙғы баҫыу эштәрендә колхозсылар агротехниканың бөтә талаптарын еренә еткереп үтәнеләр.

Колхозды хеҙмәтләндереүсе механизаторҙар коллективы намыҫлы эшләне. Трактористар Ташбулатов, Ханнанов һәм башҡа иптәштәр смена нормаларын 200 процентҡа еткереп үтәнеләр.

Ф. Мөхәмәтьянов.

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәрен юғары кимәлгә

Райондарҙың хужалыҡ һәм культура торошо бик күп төрлө. Шуның өсөн дә урындағы Советтарға бик ҙур һәм яуаплы бурыстар йөкмәтелә. Улар колхоздарҙың һәм райондың экономикаһын һәм культураһын тайпылышһыҙ үҫтереү өсөн яуаплылар. Колхоздарҙы эреләтеү район Советтәре исполкомдарынан, уларҙың бүлектәренән һәм шулай уҡ ауыл Советтәренән ауыл хужалығы техникаһын тулы файҙаланыуға, хеҙмәтте дөрөҫ планлаштырыуға һәм ойоштороуға, ауылды төҙөкләндереүгә тағы ла нығыраҡ иғтибар итеүҙе, оператив етәкселекте көсәйтеүҙе талап итә.

Был бурыстарҙы урындағы Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәрен юғары кимәлгә ҡуйғанда ғына уңышлы хәл итергә була. Был, барынан да элек, район Советтәре исполкомдарының һәм ауыл Советтәренең эштәрен дөрөҫ ойоштора белеүгә, уларҙың ойоштороусанлыҡ һәм етәкселек ролдәрен күтәреүгә, депутаттарҙың инициативаларына, массаларҙың эшмәкәрлектәренә бәйләнгән.

Ләкин республикабыҙҙың ҡайһы бер райондарында, атап әйткәндә, Борай, Архангель һәм Салауат район Советтәре исполкомдары урындағы Советтарҙың ойоштороу-массовый эштәрен баһалап еткермәйҙәр.

Борай район Советы исполкомының (председателе иптәш Ғайзов К. Г.) һәм бындағы күпселек ауыл Советтәренең ойоштороу-массовый эштәре ҡәнәғәтләнерлек түгел. Район Советы исполкомы һәм ауыл Советтәре үҙҙәренең эшмәкәрлектәрендә депутаттарға, совет активына, даими комиссияларға етерлек таяныс таянмайҙар һәм уларҙы Советтәрҙең эшенә актив йәлеп итмәйҙәр. Депутаттарға айырым поручениелар бирелмәй, уларҙың белем кимәлдәрен күтәреү, юғары органдарҙың ҡарарҙары менән таныштырыу сараһы күрелмәй. Шуның арҡаһында депутаттар үҙ һайлау округтарында һайлаусылар араһында регуляр ойоштороу эштәре алып бармайҙар, сығыштар яһамайҙар.

Урындағы Советтарға һайлауҙар кампанияһы барышында һайлаусыларҙың биргән наказдары һәм тәҡдимдәре район Советы исполкомы һәм ауыл Советтәре тарафынан иҫәпкә алынмағандар, дөйөмләштерелмәгәндәр. Шуға күрә уларҙы тормошҡа ашырыу сараһы ла күрелмәй. Был мәсьәлә район Советы, ауыл Советтәре сессияларында ла һәм исполком ултырыштарында ла тикшерелгәне юҡ.

Борай район Советы исполкомы етәкселәре Советтарҙың даими комиссиялары совет эшендә ҙур роль уйнауҙарын аңларға теләмәйҙәр. Бында район Советы сессияһында 7 даими комиссия: финанс-бюджет, ауыл хужалығы, культура-ағартыу, сауҙа, урындағы промышленность, һаулыҡ һаҡлау һәм төҙөкләндереү даими комиссиялары төҙөлгән. Уларҙың составында 27 район Советы депутаты иҫәпләнә.

Ләкин исполком был даими комиссияларға юнәлеш бирмәй, уларҙың эштәре менән ҡыҙыҡһынмай. Даими комиссияларҙың члендәре һәм председателдәре менән семинарҙар, инструктив кәңәшмәләр үткәрмәй.

Сығарылған ҡарарҙарҙың үтәлешенә контроллек ителмәй, уларҙың үтәлештәре тикшерелмәй. Шуның һөҙөмтәһендә юғарғы органдарҙың бик мөһим ҡарарҙары һәм исполкомдың үҙ ҡарарҙары үтәлмәйенсә ҡалалар.

Район Советы исполкомының ауыл Советтәренә етәкселеге лә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Ауыл Советтәренә етәкселек итеү күбеһенсә яҙма һәм телефон аша күрһәтмәләр биреү менән сикләнелә. Дөрөҫ, район Советы исполкомында һирәк кенә булһа ла айырым мәсьәләләр буйынса ауыл Советы председателдәренең информациялары тыңланыла. Ләкин урынға барып ойоштороу-массовый эштәрен юлға һалыуҙа практик ярҙам күрһәтелмәй. Ауыл Советтәренең эштәре бөтә яҡлап өйрәнеп, район Советы исполкомы ултырышына ҡуйылмай.

Урындағы Советтәрҙә ойоштороу-массовый эштәренең тейешле кимәлгә ҡуйылмауы һәм ауыл Советтәренең колхоздарға конкрет етәкселек итмәүҙәре арҡаһында хөкүмәт тарафынан бирелгән заданиелар, хужалыҡ-политик бурыстар үҙ ваҡытында, тулыһынса үтәлмәйҙәр. Мәҫәлән, общественный малсылыҡты үҫтереү һәм государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыу пландары үтәлмәйенсә ҡала. Урындағы Советтәрҙең йомшаҡ эшләүҙәре һөҙөмтәһендә үткән йылда район һәм ауыл Советтәре бюджеттәренең доход өлештәренең үтәлеше лә тәьмин ителмәне.

Был серьез кәмселектәрҙе бөтөрөү өсөн район Советына һәм ауыл Советтәренә Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәрен киҫкен яҡшыртыуға, ойоштороусанлыҡ ролдәрен күтәреүгә өлгәшергә кәрәк. Советтәрҙең эшенә бөтә депутаттарҙы һәм активте, массаны киң ылыҡтырғанда ғына ойоштороу-массовый эштәрен тейешле юғарылыҡҡа күтәрергә мөмкин.

Х. Камалов,

БАССР Министрҙәр Советының ойоштороу-инструкторлыҡ бүлеге өлкән инструкторы.

Даими комиссияларҙың эшмәкәрлеге

1950 йылдың декабрь айында хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтәренә булып үткән һайлауҙар ваҡытында һайлаусылар Ишембай ҡала Советының яңы составына бик күп наказдар бирҙеләр. Был наказдар ҡала Советына хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө өлкәһендә, шулай уҡ ҡала хеҙмәтсәндәренең материаль көн-күреш кимәлдәрен яҡшыртыу буйынса ла ҙур бурыстар йөкмәтә. Уларҙы ҡала Советының эшенә бөтә депутаттарҙы һәм ҡала хеҙмәтсәндәрен актив йәлеп иткәндә генә уңышлы хәл итеп була.

Өсөнсө саҡырылыш хеҙмәтсәндәр депутаттарының Ишембай ҡала Советының сессияһында 9 даими комиссия ойошторолғайны. Комиссиялар составында 63 депутат бар.

Һайлауҙарҙан һуң 5 ай ваҡыт үтте. Был ваҡыт эсендә ҡала Советының даими комиссиялары ҙур ғына эштәр башҡара алдылар. Врач Львов иптәш етәкселек иткән һаулыҡ һаҡлау даими комиссияһының яҡшы эшләүен әйтергә кәрәк. Был комиссияның айырым кварталдарға бүленгән, ентекләп төҙөлгән йыллыҡ эш планы бар. Һәр ай һайын комиссия члендәренең ултырыштары була. Даими комиссия исполком ултырышына сығарыла торған мәсьәләләрҙе әҙерләүҙә актив ҡатнаша. Мәҫәлән, һуңғы өс ай эсендә комиссия балалар араһында ауырыу-профилактик эштең торошон, ҡаланың санитар яҡтан таҙалығын һәм хеҙмәтсәндәр араһында профилактик саралар үткәреүҙе ойоштороу мәсьәләһен тикшереп, ул мәсьәләләрҙе ентекле әҙерләне. Комиссияның эшенә медицина работниктәре актив йәлеп ителгән.

Комиссия үҙенең ултырышында: аптеканың эшмәкәрлеге, балаларҙы медицина яғынан хеҙмәтләндереү тураһында һәм ҡаланы таҙартыу буйынса коммуналь контораһы начальниктәренең отчеттарын тикшерҙе. Һөҙөмтәлә хәҙер ҡала хеҙмәтсәндәрен, бигерәк тә балаларҙы, медицина яғынан хеҙмәтләндереү һиҙелерлек яҡшырҙы.

Ҡала Советының депутаты иптәш Березин етәкселегендәге халыҡ мәғарифе даими комиссияһы ла шулай уҡ яҡшы эшләй. Комиссияның инициативаһында ҡала исполкомы өлкәндәрҙе уҡытыуҙың торошон һәм эшсе йәштәр мәктәбенең эшен ҡараны. Был комиссия үҙенең эш планында ошондай мәсьәләләрҙе тикшереүҙе билдәләй: мәғариф селтәре эшен яҡшыртыу буйынса һайлаусылар наказдарының үтәлеше, мәғариф селтәренә ебәрелгән бюджеттең үтәлешен тикшереү, мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү, мәктәптәрҙә яҙғы экзамендарға һәм күсереү экзамендарына әҙерләнеүҙең барышы һәм башҡалар.

Иптәш Назаров етәкселек иткән культура-ағартыу комиссияһы ҡала Советы сессияһына ҡалала культура-ағартыу эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тигән мәсьәләне әҙерләне. Сессияла тикшерелгән мәсьәлә буйынса конкрет ҡарар ҡабул ителде. Исполком ултырышында ҡалала физкультура һәм спорт эшенең торошо тураһындағы мәсьәлә ҡаралды.

Ҡала Советының коммуналь-хужалыҡ эштәре буйынса даими комиссияһы ла ҡала Советының эшендә ҙур ярҙам күрһәтә. Был комиссия ҡала Советының сессияһына 1950 йылда ҡаланы төҙөкләндереү эштәренең йомғаҡтары һәм 1951 йыл өсөн бурыстар тигән мәсьәләне әҙерләне. Башҡа комиссиялар ҙа үҙҙәренең эштәрен йәнләндерҙеләр.

Беҙ бөтә даими комиссияларҙың да эш пландарын сессия ултырыштарында раҫлайбыҙ. Бында депутаттар үҙҙәренең тәҡдимдәрен индерәләр. Икенсе сессияла даими комиссияларҙың председателдәре раҫланған пландың үтәлеше тураһында депутаттарға информация яһайҙар. Бындай тәртип планда күрһәтелгән эштәрҙе башҡарыу өсөн яуаплылыҡты арттырҙы. Хәҙер беҙҙең бөтә даими комиссияларыбыҙ һайлаусыларҙың наказдарын үтәү буйынса ҙур эштәр алып баралар.

Ишембай хеҙмәтсәндәре был көндәрҙә ҙур шатлыҡ кисерәләр. Илебеҙҙең нефтселәре араһында социалистик ярышты йәйелдереп ебәреүҙә беренсе һүҙ Башҡортостан нефтселәренә бирелде. Ишембай ҡалаһының нефтселәре иптәш Сталинға яҙған хаттарында алған социалистик йөкләмәләрен үтәү өсөн ярышты киң йәйелдерҙеләр. Нефтселәрҙең хеҙмәт активлеге менән етәкселек итеү һәм уны алда торған маҡсатҡа тиҙерәк ирешеү өсөн йүнәлдереү — депутаттарҙың мөһим бурысы ул.

Х. Сәитов,

хеҙмәтсәндәр депутаттарының Ишембай ҡала Советы исполкомы председателе.

ҠАРА БОЙҘАЙҘАН ЮҒАРЫ ҺӘМ ТОТОРОҠЛО УРОЖАЙ АЛЫУ ӨСӨН

Ҡара бойҙай ул ҡиммәтле ярма культураһы иҫәпләнә. Шуға күрә уны бөйөк Сталин «төньяҡтың догоһе» ул тип атаны.

Беҙҙең республика ҡара бойҙай культураһын үҫтереү буйынса Советтар Союзының төп райондарынан береһе иҫәпләнә. Республикабыҙҙың тупраҡ-климат шарттары ҡара бойҙай үҫтереүгә һәм унан тоторолҡо юғары урожай алыуға бөтә мөмкинлектәрҙе бирә. Беҙҙең алдынғылар был культуранан йыл һайын юғары урожай алып киләләр. Мәҫәлән, Благовещен районы «Каменный ключ» колхозында 40 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 13-әр центнер, Тельман, «Пахарь» колхоздарында 14—15-әр центнер «Звезда» колхозында 28 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 17 центнер, Иглин районы «Большевик» колхозында 18-әр центнер, Өфө районы Фрунзе исемендәге, «Броневик» һәм башҡа күп кенә колхоздарында 12 — 13-әр центнер урожай алыуға өлгәштеләр.

Алдынғы колхоздарҙың тәжрибәләренә анализ яһау — ҡара бойҙайҙан беҙҙең бөтә райондарҙа ла юғары урожай алыу мөмкинлеген асыҡ күрһәтә. Былың өсөн улар ҡара бойҙай үҫтереү агротехникаһын культураның биологик үҙенсәлегенән сығып төҙөйҙәр һәм алдынғы агротехник сараларҙы киң рәүештә ҡулланалар. Мәҫәлән, Өфө районы «Красный путь» колхозында 49 гектар участканың һәр бер гектарынан 12-шәр центнер урожай алыу өсөн уны туңға һөрелгән бөрәк төбөнә, 45 сантиметр киңлегендә киң рәтле итеп сәсеү үткәрелде. Тупраҡ сәсеү алдынан культивацияланды, «Богатырь» сортлы кондицион орлоҡтар 25 майҙа сәселделәр. Бер гектарға 45 килограмм орлоҡ сәселде. Рәт араларына йомшартыу һәм ҡый үләндәренә утау үткәрелде. Ҡара бойҙай сәскә ата башлау алдынан ғына сәсеүлеккә бал ҡорто умарталары сығарылды, улар ҡара бойҙайҙы һеркәләндереүҙә файҙаланылдылар.

Благовещен районы «Вторая пятилетка» колхозында, был сараларҙан тыш, сәсеүлектәргә агроном Мусийко методы буйынса яһалма һеркәләндереү үткәрелде. Иглин районы «Большевик» колхозында ҡара бойҙай сәсеү өсөн ҡалдырылған туңға һөрөлгән ерҙең тупрағы артыҡ тығыҙланыуы белеңгәс, ул 15 сантиметр тәрәнлегенә лущить ителде. Һәм бер уҡ ваҡытта тырматыу үткәрелде. Ер таҙа булғанлыҡтан, бында орлоҡтар теҙмә юл менән тотош итеп сәселделәр, урожай комбайн менән йыйнап алынды.

Өфө тәжрибә баҫыуында дүртенсе йыл инде ҡара бойҙай тоторолҡо юғары урожай биреп килә. Мәҫәлән, бында үҙған йыл, йәйҙең беренсе яртыһы шаҡтай ҡоро булыуға ҡарамаҫтан, уртаса 17-шәр центнер урожай алыуға өлгәшелде. Бында ул ҡый үләндәренән таҙа ерҙәргә теҙмә юл менән тотош итеп сәселә һәм киң рәтле итеп сәсеү ҡулланыла. Ҡара бойҙай арыштан һуң, фосфор, калий ашламалары менән ашланған ергә, 25 — 30 майҙа тирәләрендә сәселә, сәсеүлек катоклап ҡуйыла. Һуңғы сара орлоҡтарҙың берҙәм шытып сығыуын тәьмин итә. Һеркәләндереү бал ҡорттары ярҙамы менән үткәрелә. Ҡара бойҙай өтеп өлгөргәс, бик тиҙ ҡойолаусан культура ул. Шуға күрә тәжрибә баҫыуы уны 2-3 көндә урып йыйып алыуға һәм киптереү менән һуғып таҙартыуға айырыуса ныҡ иғтибар итә.

Ҡара бойҙай үҫтереүҙә алдынғыларҙың был уңышлы тәжрибәләрен дөйөмләштереп быйыл түбәндәге агрокомплексты тәҡдим итергә була.

Был ҡый үләндәре менән яҡшы көрәшә ала торған культура, ләкин, шулай ҙа уны билсәнле, ҡара һололо, аҡтамырлы һәм бесәй ҡойроғо үләне үҫә торған участкаларға сәсеүҙән һаҡ булырға кәрәк.

Был культура тупраҡтың юғары уңдырышлы булыуын, һыу һәм аҙыҡ элементтәре менән етерлек тәьмин ителгән булыуҙы талап итә. Уны туңғалаҡтар була торған түбән һалҡын урындарға сәсеү ярамай. Ағаслыҡ, урман полосаларына яҡын итеп, урман араларындағы баҫыуҙарға сәсеү уны яҙ һәм йәй көнө була торған туңғалаҡтарҙан һаҡлауға ярҙам итәсәк.

Ул тупраҡтың яҡшы итеп эшкәртелгән булыуын бик ныҡ талап итә торған культура. Шуға күрә уны туңға тәрән итеп һөрөлгән ерҙәргә генә сәсергә, бындай ерҙәр яҙ көнө байтаҡ тығыҙланған хәлдәрҙә, уны 10—12 сантиметр тәрәнлегенә лущить итеү йәки культивациялау кәрәк. Тупраҡты сәсеү алдынан эшкәртеүҙе орлоҡтарҙы күмдереү тәрәнлегенә генә һәм ҡаҫып әйләндермәй торған ҡоралдар менән генә эшкәртеү яҡшы. Бер өлөш майҙанда яҙ һөрөп сәсергә тура килгәндә, был эште предплужникле һабан менән һәм 20 — 22 сантиметр тәрәнлегенә үткәрергә кәрәк. Һөрөлгән ер шунда уҡ тырматылып ҡуйылырға тейеш.

Ҡара бойҙай өсөн иң яҡшы ерҙәр булып арыш, борсаҡ, яҙғы бойҙай артынан сәсеү иҫәпләнә. Был ерҙәргә уны киң рәтле итеп сәсеү яҡшыраҡ була. Күп йыллыҡ үлән төптәре, бигерәк тә клевер әҙәмдәре ҡара бойҙай сәсеү өсөн иң яҡшы ерҙәр булып иҫәпләнәләр. Бында үләнде теҙмә юл менән тотош сәсергә була.

Был культура ашламалар индерелгән ергә юғары урожай бирә. Үҙған йыл Өфө тәжрибә баҫыуында орлоҡтар менән рәттәргә индерелгән (бер гектарға 100 килограмм иҫәбенән) гранулы суперфосфат 6 центнер өҫтәмә урожай алыуҙы тәьмин итте.

Беҙҙә «Богатырь», «Горнолесная», иртә өлгөрөүсән «Шишмә сорты», «Казанская» тигән сорт ҡара бойҙайҙар юғары урожай бирәләр. Былардан тыш урындағы сорттарҙы киң файҙаланырға кәрәк.

Ҡара бойҙайҙың иң эре бөртөклө орлоҡтарын сәсеү уның дөйөм урожайын 4 центнерға тиклем күтәрә. Ә уны яровизациялаштырып сәсеү өс центнерға тиклем өҫтәмә урожай алыуҙы тәьмин итә.

Ҡара бойҙай бик аҙ ғына туңғалаҡтарға ла сыҙамһыҙ культура ул. Шуға күрә уны шытымдары барлыҡҡа килгәс, туңғалаҡтар ҡабатланмау иҫәбе менән сәсергә кәрәк. Беҙҙең шарттарҙа уны 20—25 майҙан да иртә сроктарҙа сәсә башлау ярамай. Иң яҡшы срок — 25 май — 5 июнь аралары.

Ҡыйлы участкаларға уны 30 — 45 сантиметр киңлегендә киң рәтле итеп сәсеү яҡшыраҡ буласаҡ. Бер гектарға 80 — 90 килограмм, киң рәтле итеп сәскәндә 50 — 60 килограмм сәсергә мөмкин. Орлоҡтарҙы 5-6 сантиметр тәрәнлегенә күмдереү кәрәк. Сәсеүҙән һуң ерҙе өҫтән катоклау файҙалы сара буласаҡ.

Йәй буйына рәт араларын бер ике тапҡыр йомшартырға, ҡыйҙарҙан таҙартырға, өҫтәмә һеркәләндереү үткәрергә кәрәк. Уның тулы һеркәләнеүенә бал ҡорттары бик ныҡ ярҙам итәләр. Ҡара бойҙай сәскә ата башлауҙан алда колхоздағы бөтә умарталарҙы уның сәсеүлеге янына сығарып ҡуйырға кәрәк. Был сара һәр бер гектарҙан 4 — 10 центнер өҫтәмә урожай һәм бер баш умартаға 60 — 90 килограмм бал йыйнауҙы тәьмин итә.

Агроном Б. Ғирфанов.

ФЕЛЬЕТОН

Мәсетлелә бар күпер уны кемдәр төҙәтер?..

Яҙ килде. Өй һыуы арҙарынан ашып уйнаусыларға йөҙөлде. Һыу көсәйҙе. Бөҙ менән бергә яр башына өйөп жыйған күпер агастары ла жүрҙәлә башланы. Зур-зур өс кәмә ысынлап генә тулҡындар өстөндә сайкала-сайкала түбән ағып киттеләр.

Һыуы урғаһында ҡалған сторож өйө [illegible]

Район юл төҙөү бүлегендә лә шулай [illegible] Каюмов [illegible]

Иптәш Хәлиуллин председателлек [illegible]

[illegible]

Юл төҙөү бүлеге мөдире иптәш Каюмов [illegible]

— Былтыр өсөн иптәш Хәлиуллин [illegible]

[illegible]

— Иптәш Хәлиуллин [illegible]

Бытәһе лә иҫән-һауҙар. [illegible]

[illegible]

Әле күптән түгел беҙ машинала [illegible]

— Был бит Мәсетлелә бар күпер [illegible]

[illegible]

— Иштетегеҙме? [illegible]

Ул атына ныҡлай менеп һәм Каюмовҡа [illegible]

Нур Ғәлимов.

Инкубатор төҙөлдө

Ҡандра районы [illegible] 1951 йылда [illegible] 62 меңдән артыҡ [illegible] инкубатор төҙөлә. [illegible] ды ла инде. Районда колхоздар станцияһына [illegible]

Ғ. Ғәзизуллина.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаçарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 22 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаçарҙары 22 майҙа үҙҙәренең 58-се ултырышына йыйылдылар. Великобритания вәкиле Дэвис председателлек итте.

22 майҙағы ултырышта көнбайыш державалары делегациялары Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары туранындағы мәсьәләне [illegible] Советенә [illegible]

Великобритания вәкиле Дэвис былай тип белдерҙе: «Беҙ (Англия, көнбайыштағы өс держава делегациялары) Атлантик пакт [illegible]

Пароди, Франция делегацияһы Дэвис иҫкәртеүҙәренә «тулыһынса ҡушыла», тип белдерҙе.

Дэвискә һәм Пародиға яуап биреп, СССР вәкиле А. Громыко былай тине:

— Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары туранындағы мәсьәләнең [illegible]

[illegible]

— Беҙ [illegible]

Громыконан һуң Джессеп һүҙ алды. Ләкин ул өс держава позицияһын яҡлап бер ниндәй ҙә нигеҙле дәлил килтерә алманы. Уның сығышы Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары туранындағы мәсьәләне тикшереүҙән көнбайыш державалар хөкүмәттәренең ҡурҡыуын тағы ла бер тапҡыр раçланы, сөнки был пакты һәм ошо базаларҙы төҙөү халыҡ-ара именлекте ныҡытыу интерестарына ҡапма-ҡаршы килә.

* * *

ПАРИЖ, 23 май. (ТАСС). 23 майҙа СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәренең урынбаçарҙары үҙҙәренең 59-сы ултырышына йыйналдылар. А. Громыко председателлек итте.

Хәбәр ителгәненсә, 22 майҙағы ултырышта СССР вәкиле Громыко үҙенең сығышында Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары туранындағы мәсьәләне хатта килешелмәгән пункт сифатында ла көн тәртибенә индереүгә ныҡышмалы ҡаршы килеүсе көнбайыштағы өс держава делегацияларының позицияһының тулы нигеҙһеҙлеген күрһәткәйне.

Көнбайыштағы өс держава вәкилдәре үҙ позицияларын ныҡытырға тырышып, килтергән бөтә «дәлилдәр» бөткәс, улар 23 майҙағы ултырышта һүҙ алырға теләмәнеләр. Был айҡанлы ултырыш ябылды.

Пәүбәттәге ултырыш 24 майҙа буласаҡ.

Ҡытай Халыҡ Республикаһы сит ил эштәре министерствоһы вәкиленең белдереүе

ПЕКИН, 22 май. (ТАСС). Синьхуа агентствоһы Ҡытай Халыҡ Республикаһына һәм Корея Халыҡ-Демократик Республикаһына тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында БМО Генеральный Ассамблеяһының законһыҙ резолюция ҡабул итеүе хаҡында Ҡытай Халыҡ Республикаһы сит ил эштәре министерствоһы вәкиленең белдереүен тапшыра.

Белдереүҙә былай тип әйтелә:

Америка Ҡушма Штаттары хөкүмәтенең баçымы аçтында һәм ҡушыуы буйынса БМО Генеральный Ассамблеяһы, Советтәр Союзы, Польша, Чехословакия, Индияның һәм башҡа илдәрҙең ҡаршы килеүенә ҡарамаçтан, Ҡытай Халыҡ Республикаһына һәм Корея Халыҡ-Демократик Республикаһына тауарҙар индереүҙе тыйыу тураһында Ҡушма Штаттар тарафынан тапшырылған резолюцияны 1951 йылдың 18 майында законһыҙ ҡабул итте. Ҡытайҙы яла яғып агрессор, тип иғлан итеүсе хурлыҡлы резолюцияны законһыҙ ҡабул иткәндән һуң, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының был яңы законһыҙ акты БМО Уставын боҙоу. Именселек Советенең компетенцияһына ҡул һуҙыу һәм агрессив һуғышты киңәйтергә яуыз ниәт менән маташыу булып тора.

Ҡытайға яла яғыусы резолюцияны БМО Генеральный Ассамблеяһы законһыҙ ҡабул иткәндән һуң Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы үҙе менән Ҡытай халҡы араһында дошманлыҡ мижаһын барлыҡҡа килтерҙе. Ҡушма Штаттар тәҡдим иткән резолюцияны БМО Генеральный Ассамблеяһының яңынан законһыҙ ҡабул итеүе факты Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының агрессив һуғышты киңәйтеү ҡоралына әленән-әле күберәк әүерелеүен һәм Ҡушма Штаттар етәксөлек иткән империалистик блокҡа хеҙмәт итеүен тағы ла бер тапҡыр иçбатлай.

Был законһыҙ резолюция Ҡушма Штаттарҙың агрессив көстәренең Кореялағы һуғыштарҙа күп тапҡырҙар һәләкәтле еңелеүҙәренән һуң хәлде төҙәтеү өсөн АҠШ хөкүмәтенең Кореяға һәм Ҡытайға ҡаршы агрессив һуғышта үҙ эйәрсендәрен тағы ла киңерәк ҡатнашырға мәжбүр итергә ынтылыуын асыҡ күрһәтә. Шуға күрә Ҡытайға һәм Кореяға тауарҙар индереүҙе тыйыу агрессив һуғышты киңәйтергә маташып, Ҡушма Штаттар хөкүмәте тарафынан яһалған мөһим аҙым булып тора.

Был законһыҙ резолюцияның һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһына һәм Корея Халыҡ-Демократик Республикаһына тауарҙарҙы индереүҙе тыйыу буйынса хәрәкәттәрҙең Америка агрессорҙарына ҡаршы Ҡытай һәм Корея халыҡтары алып барған еңеүсән һуғышҡа бер нисек тә йоғонто яһай алмауы тулыһынса асыҡ. Корея Халыҡ армияһы һәм Ҡытай добровольцтары Кореялағы һуғыш яландарында зур еңеүҙәргә өлгәштеләр; шул арҡала ошондай обстановка барлыҡҡа килде: Америка агрессорҙары еңелеүгә дусар ителделәр һәм Ҡытай менән Корея халыҡтары еңеүгә өлгәшергә тейештәр. Америка агрессорҙарының һәм уларҙың эйәрсендәренең Кореяға ҡаршы агрессив һуғышты киңәйтергә маташҡан аҡылһыҙ хәрәкәттәре Америка агрессорҙарын еңелеүҙән ҡотҡара алмаясаҡ. Һуғышты киңәйтеү маҡсаттарында Америка агрессорҙары яһаған бөтә төр демонстрациялар һәм бөтә төр хәрәкәттәр тик Америка агрессорҙарына ҡаршы көрәштә Ҡытай һәм Корея халыҡтарының боевой рухын нығытыуға ғына, һәм Америка агрессорҙарының тамам еңелеүен тиҙләтеүгә генә килтереүе мөмкин.

Шуны күрһәтергә кәрәк, Ҡушма Штаттар тәҡдим иткән юғарыла әйтелгән резолюция законһыҙ ҡабул ителгәнгә тиклем бик күп элек үк Англия хөкүмәте сауҙа өлкәһендә Ҡытай Халыҡ Республикаһына ҡаршы күп кенә дошманлыҡ хәрәкәттәрен яһағайны, һәм үҙен Ҡытай халҡының дошманы булып тороуын күрһәтте. Ҡытайға һәм Кореяға тауарҙар индереүҙе тыйыуҙа Ҡушма Штаттарға эйәргән бөтә илдәр Ҡытайға ҡарата үҙҙәренең дошманлыҡ акттарынан барлыҡҡа килгән бөтә әҙемтәләр өсөн яуаплы буласаҡтар.

Ҡушма Штаттар хөкүмәтенең Ҡытайға һәм Кореяға тауарҙар индереүҙе тыйыу тип аталған нәмә тураһындағы был законһыҙ резолюцияны бөтә донъя баҙарында нормаль мөнәсәбәттәрҙе емереү өсөн, ҡайһы бер сырье материалдарына баҙар хаҡтарының арзанайыуын тыуҙырыу өсөн файҙаланыуы фактын да шулай уҡ ситләтеп үтергә ярамай. АҠШ быны Американың ҡорал менән сауҙа итеүселәренең ошо сырье материалдарын һатып алыуға монополияһын таңып итеү маҡсатында, шулай уҡ ошо сырье материалдарын етештереүсе илдәр экономикаһына контроль урынлаштырыу өсөн эшләй. Тыныслыҡҡа ынтылыусы бөтә бойондороҡһоҙ һәм суверенный государстволар Ҡушма Штаттарҙың был әҙләнеүҙәренә ҡарата һиҙгерлек күрһәтмәйенсә ҡала алмайҙар.

Ҡытай халҡы Берләшкән Милләттәрҙең был законһыҙ һәм хурлыҡлы резолюцияһына ҡаршы ҡырҡа протест белдерә һәм, был хурлыҡлы һәм законһыҙ резолюцияға Америка агрессорҙарына ехерткес еңелеү килтереү менән үҙенең яуап бирә аласағына ныҡ ышана.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 23 май. (ТАСС). Корея Халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 23 майҙа Корея Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ [illegible] итеп, бөтә фронттарҙа ла Американ Англия интервенционистик ғәскәрҙәренә зур юғалтыуҙар яһайҙар, тип хәбәр итте.

Тәүге мәғлүмәттәргә ҡарағанда, [illegible] көн дауам иткән һуғышта Америка һәм Көньяҡ Корея армияһының 7 меңдән [illegible] тыҡ һалдаты һәм офицеры үлтерелгән һәм яраланған. Үлтерелеүселәр иçәбендә Көньяҡ Кореяның 8-се полкының командиры бар.

6 меңдән артығыраҡ америкаң, француз һәм лисынмансы һалдат һәм офицеры пленгә алынды.

3 меңдән артығыраҡ винтовка, 180-дән ашыуыраҡ ауыр һәм еңел пулемет, 60-тан артығыраҡ миномет, 80-дән артығыраҡ ауыр орудие һәм гаубица, төрлө калибрҙағы башҡа төрлө орудиелар — 133, 31 танк, 800-ҙән артығыраҡ автомашина, 66 радиоустановка ҡулға төшөрөлдө.

Дошмандың 23 самолеты атып төшөрөлдө һәм 10 самолеты зарарландырылды.

Ҡытай эшселәренең производство уңыштары

ПЕКИН, 23 май. (ТАСС). Инженер Ковалев методы Ҡытай предприятиеларында әленән-әле киңерәк индерелә. Совет специалистарының һәм стахановсыларының тәжрибәһе Ҡытай эшселәренә, продукцияның сифатын күтәрергә һәм һанын арттырырға ярҙам итә.

«Женьминьжибао» газетаһы, Ковалев методын ҡулланыусы ҡайһы бер предприятиелар продукция етештереүҙе [illegible] тапҡырға арттырҙылар һәм сифатын байтаҡ яҡшырттылар, тип яҙа. Ул Мукден, Харбин предприятиеларында һәм башҡа промышленность үҙәктәрендә киң ҡулланыла.

Алдынғы совет методтарын производствоға индереү өсөн хәрәкәт, тип күрһәтә газета, эшселәр менән инженер-техник работниктәр араһында патриотик производство ярышын көсәйтеүгә һәм нормаларҙы урынлаштырыуға байтаҡ ярҙам итте.

Тяньцзинь предприятиеларының эшселәре, тип яҙа «Тяньцзиньжибао» газетаһы, металды тиҙләтелгән метод менән ҡырҡыуҙы үҙләштерәләр. Тяньцзинь автомастерскойҙары эшселәренең алдынғы тәжрибәһен таратыу маҡсаттарында уларҙың өлгәшеүҙәрен күрһәтеү ойошторолдо. Автомастерскойҙарҙың эшселәре металды тиҙләтелгән метод менән ҡырҡыу буйынса үҙ уңыштарын демонстрацияланылар. Кәкре валдарҙы шымартыу буйынса бөтә операция элекке 90 минут урынына хәҙер бары 6 минут 42 секундта башҡарыла. Элек ике сәғәт эсендә фрезер станогында эшләнгән деталь хәҙер 28 минут 30 секунд эсендә эшләнә. Эшсе Син Дэ-и поршен шарниренең ғәҙәттәге 6 сәғәт урынына 45 минут эсендә эшкәртҡән.

Тыныслыҡ пакты өсөн

ФИНЛЯНДИЯ

ХЕЛЬСИНКИ, 23 май. (ТАСС). Биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалары йыйнау Финляндияла уңышлы дауам итә. «Финляндияла тыныслыҡты яҡлаусылар» ойошмаһының бюроһына 23 майға 221.587 ҡултамғаһы тапшырылған. Лапланд губернаһында ҡултамғаһы йыйнау айырыуса уңышлы үтә. Унда Мөрәжәғәткә бөтә халыҡтың 17 проценте ҡул ҡуйған да инде.

АРГЕНТИНА

МОНТЕВИДЕО, 23 май. (ТАСС). Полиция эҙәрләүҙәренә ҡарамаçтан, Аргентинала биш бөйөк держава араһында тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡултамғалары йыйнау киң йәйелдерелгән.

Аргентинаның «Нуэстра палабра» газетаһы билдәләгәнсә, тыныслыҡты яҡлауҙың Аргентина комитетына Мөрәжәғәткә ҡуйылған беренсе 100 мең ҡултамғаһы тапшырылған да инде. Аргентинаның тыныслыҡты яҡлаусылары алған йөкләмәләрен — 15 июнгә Мөрәжәғәткә 500 мең ҡултамғаһы йыйнау тураһындағы йөкләмәне — үтәүҙе уңышлы дауам иттерәләр.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Төнгө рейд

I.

Бәләкәй күк автобус тигеҙ асфальт юл буйлап бара. Ундағы кешеләр зур иғтибар менән тәбиғәт күренешен күҙәтәләр: тирә-яҡта электр лампалары һәм һирәк газ факелдәренән әле һүнмәгән ҡыҙыл уттар күренәләр, улар бейек вышкаларҙы, аҡ качалкаларҙы, тау итәктәрен, телефон бағаналарын, яңғыҙ ҡайындарҙы төн ҡараңғылығында тотоп алалар... Нефть вышкалары был төндә ниндәйҙер серле тормошта йәшәгәндәй күренәләр: бороуҙары уларҙың, әйтерһең, ахылдап, Нарыш тау башынан төшөп киләләр, икенселәре — уның итәгендә генә әле, ә өсөнселәре инде ауыл баҡсаларына уҡ еткәндәр... Күк йәҙә һуғыш яланы өҫтөндәге күкте хәтерләтә: һирәк болоттар араһында ҡыҙғылт-һары яҡтылыҡ, ә горизонтта ҡара-һыу ҡыҙыл линия сағыла... Тимәк, ҡайҙалыр, йыраҡта, горизонт артында ла, шулай уҡ нефть сыға.

Был бәләкәй автобустың пассажирҙәре: инженерҙәр һәм журналистар был төндә, төнгө вахталарҙың эштәре менән танышыу маҡсатында, бик күп буровойҙарҙа булдылар.

Төндә лә көндөҙгө кеүек эшләү өсөн!

«Туймазыбурнефть» тресының бораулаусылары, скважиналарҙы бораулауҙа булған артталыҡты еңеп, ҡышҡы айҙарҙағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрҙөләр һәм май айында графиктан күп алда эшләйҙәр. Был уңыштар эффектлы эре блоклы монтаж ҡулланыу һәм буровой оборудованиеларҙы ремонтлауҙың сифатын яҡшыртыу, күп кенә буровойҙарға бораулауҙың яңы, камиллаштырылған режимен индереү һәм форсированный режимда эшләүсе бригадаларҙың һанын арттырыу менән бәйләнгәндәр.

Шуныһы характерлы, бораулаусылар, элекке кеүек, илдағы бригадалар һанын арттырыу менән түгел, ә күпселек бригадаларҙың проходка биреү тиҙлеген күтәреү менән үтәргә өйрәнделәр. 1951 йылда мастер иптәш Сидоренко бригадаһы, форсированный режимда эшләп, станок-айға рекорд тиҙлек — 1156 метр проходка бирҙе. Мастер иптәш Аллаяров бригадаһы, ғәҙәттәге тиҙлектә эшләп, 911 метр проходка биреүгә өлгәште. Былардан башҡа ла Социалистик Хеҙмәт Геройы, Сталин премияһы лауреаты Н. Д. Куприянов, мастерҙар Белянинов, Алексеев, Усов, йәш бораулау мастерҙары Дуланов, Михайлов, Гуров, Тезиков һәм бораулау графигынан алда эшләүсе башҡа бик күп иптәштәрҙең уңыштарын әйтеп китеүгә урынлы.

Ләкин, бораулауҙың дәйем күтәрелеше һәм проходка биреүҙең тиҙлеген артабан арттырыу өсөн бөтә резервтар ҙа ҡулланыла, тип әйтеп буламы? Юҡ, әйтеп булмай. Быны ошо көндәрҙә бораулау бригадаларының эштәренә үткәрелгән төнгө рейд асыҡ раçланы.

II.

Беренсе номерлы бораулау конторәһында ай үтеү менән бораулау бригадалары араһында социалистик ярыш һөҙөмтәләре тикшерелә. Ярышта беренселекте алыусы буровойҙарҙа Ҡыҙыл йондоҙ яна башлай. Ул стахановсыларҙың почетын билдәләй.

Беҙ, мастеры иптәш Алексеев булған 280-се номерлы буровойҙа. Долото эш өҫтөндә. Проходка тиҙләтелгән темп менән бара. 18 көн эсендә бригада 1077 метр проходка биргән. Апрель айы планын ул арттырып үтәгән. Дирекция менән буркөм буровойҙа Ҡыҙыл йондоҙ яндырырға ҡарар иткәндәр. Ләкин ул юҡ. Быны сәбәбен һораныҡ.

— Лампочкалар юҡ, — тине бораулаусы Ф. Бизин.

— Йондоҙ өсөн түгел, яҡтыртыу өсөн дә 20 лампочка урынына ни бары бишәү генә әле, — тип асыҡлап бирҙе беҙгә иптәш Цыганов.

Ысындан да, буровойҙа ярым ҡараңғылыҡ. Лебедка рычагынан 8-10 метрҙар самаһы алыçлыҡта эленгән манометрҙәҙы баçымды саҡ-саҡ ҡына айырып була. Верховой бөтөнләй ҡараңғыла эшләй. Оборудованиелар электр уты менән тәьмин ителмәгәндәр.

— Бындай ҡараңғылыҡта һеҙ эшегеҙҙә оттораһығыҙ ғына бит, — тинек беҙ бораулаусыға, уны ҡыҙғаныр.

— Отторәу ғына түгел, тулыһы менән тәртипһеҙлек. Бындай ҡараңғылыҡта һөрөнөп йығылып, имгәнеп ҡуйыуың да мөмкин. Был ғына аҙ — аварияға ла осраһың.

— Бындай ваҡиғалар булдылармы?

— Хәҙергә авариялар булғаны юҡ. Ләкин яҡтылыҡ булғанда, яҡшыраҡ эшләр инек. Ҡараңғыла һөрмәләп кенә эшләргә тура килә, — тип һүҙен тамамланы бораулаусы.

Шулай итеп, буровойҙар электр уты менән яҡтыртылмаһылар. Беҙ быға башҡа бригадаларҙа тамам ышандыҡ. Электр уты яҡтылығының булмауы проходка биреү кимәлен кәметә, эшселәрҙең эшен ауырлаштыра һәм, хатта, авария ваҡиғаһын да тыуҙырырға мөмкин. Нәмәлә һуң эш? Электр лампалары әллә хәл итмәçлек проблемамы? Бындай һорауҙар трест управляющийе иптәш Слепянға бирелделәр.

— Лампочкалар юҡ...: Техник тәьминат бирмәй, ә магазиндарҙа улар бер ваҡытта ла булмай. Шулай уҡ электр проводтары ла етешмәй, — тип яуап бирҙе управляющий. Ул электр лампаларының магазиндарҙа һатылмауына айырыуса баçым яһаны.

III.

Төнгө сәғәт берҙә шундай уҡ ярым ҡараңғылыҡта беҙҙе мастер иптәш Ғәлимовтың 450-се номерлы буровойында ҡаршыланылар. Бораулаусы иптәш Пылов хәҙер генә культбудканан ҡайтҡан. Ул буровойҙың складына, насосты ремонтлау өсөн плашкалар һорап, бер нисә тапҡыр шылтыратты һәм шунда уҡ дүрт километр алыçлыҡҡа йәйәү нарочный ебәрҙе.

— Телефон аша тик әрләшәһең генә... Бары бер ебәрмәйҙәр, — тине беҙгә бораулаусы, үҙенең ҡайғыһын белдереп. Ул буровойҙың складынан ебәрелгән комплектһыҙ плашкаларҙы күрһәтте.

— Нимә булды шланг менән, күптән буш тораһығыҙмы?

— Ике тәүлек торабыҙ. Шланг тураһында... Уның механика мастерскойында насар ремонтланыуы буровойҙы монтажлағанда уҡ билдәле ине.

— Ҡасан бораулай башлайһығыҙ? — тип һораныҡ беҙ.

— Нарочный плашкалар килтерһә, сәғәт ярымдан һуң башлайбыҙ.

— Бәлки, плашкалар буровойҙың складында юҡтыр?

— Бар, булғанын беләм, хатта артып ҡалырлыҡ.

Буровой складының работниктәре комплектһыҙ плашкалар ебәргән һәм төнгө эш ваҡытында буровойҙарҙы бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеүҙә борола алмағандары өсөн, йыш ҡына бораулаусылар тарафынан һүгеләләр.

IV.

Көнбайышта тулы ай горизонтҡа яҡынлашты. Ә уға ҡаршы яҡта, көнсығышта, саҡ ҡына яҡтылыҡ сағылды. Автобус юл соҡорҙарынан һалмаҡ ҡына һелкенде. Өс-дүрт минуттан һуң беҙ яңы буровойҙа инек инде.

— Шулай тот, шулай! — команда бирҙе лебедка янындағы кеше аçҡыс менән торбаны тотоп тороусыға, үҙе педалдарҙың береһенә еңел баçты. Өçкө бораулау торбаһы урынынан ситкә китте һәм аçҡыһының резбаһын баçты. Аçҡыстар асылып, шап итеп ябылдылар. Һауала ситкә боролған торба һалмаҡ ҡына төштө һәм башҡалар менән бер рәттән үҙ урынын алды...

Эшселәр ҡулланған инструменттарҙың бәрелеүҙәре, буровойҙың ҡалтыранығы менән бергә ҡушылып, яңы тауыш тыуҙырҙылар. Был минут эсендә, торбаларҙы күтәреү һәм төшөрөү операцияһы барған саҡта, беҙҙең килгәнде һиҙгән кеше булманы. Был ваҡытта вахта члендәре эш менән дә бик ныҡ мауыҡҡайнылар.

Беҙҙе төнгө вахталарҙың эшен тикшереү буйынса рейд бригадаһы члендәре икәнен белгәс, бораулаусы:

— Мастер Тезиковтың 463-сө буровойы. Вахта инструменттарҙы күтәреү операцияһын тамамлай. Бораулаусы — Николай Решетилов, бораулаусы ярҙамсыһы — Михаил Матросов, эшсе — Иван Сотников, верховой — Александр Варфоломеев. Забойҙың тәрәнлеге 814... Тағы нәмә кәрәк? Беҙҙе эш көтә, һорағыҙ, — тип ағымлы сырай менән ҡаршыланы.

Беҙ бригаданың кем менән ярышыуы, ниндәй йөкләмә алыуы, буровойҙың ҡасан бораулана башланыуы менән таныштыҡ һәм, торбаларҙы күтәреү буйынса операцияларҙың үтәлеүен сәғәт буйынса тикшереп, вахтаның эшен күҙәтә башланыҡ. Бында беҙ бригаданың бер насос менән 19 көн эсендә 814 метр бораулауына тулыһынса ышандыҡ. Был вахтаға уның өстән бер өлөшөнән артығыраға төшә. Күтәреү, йыйыу һәм бер торбаны ҡуйыу 10—15 минут эсендә башҡарыла. Төн улар өсөн бары бер... Көндөҙгө кеүек. Ни тиклем ауыр, шул тиклем иғтибарлыҡ менән эшләйҙәр улар. Һәм шулай кәрәк тә!

Рейдта ҡатнаштылар:

Ә. Ғиччентаев,
И. Егоров.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Рус драма театрында — «ТОРМОШ ӨСӨН КӨРӘШ».

«Октябрҙә» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘАРЫ».

«Уралда» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘАРЫ».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа «ШАТ ЕГЕТТӘР».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаçары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

ПО2863. Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

№ 102 (8819)
1951 йыл
26
МАЙ
шәмбе

хаҡы 20 тин.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Советтәр Союзында (1-се бит).
В. Миронов. — Оборудованиеләрҙе рациональ файҙаланыу (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. А. Мансуров. — Производство мәсьәләләре цех партия ойошмаһының иғтибар үҙәгендә (2-се бит).
Х. Баимов. — Социалистик ярыштың көсө (2-се бит).
Б. Шнеер. — РКП(б)-ның уныусы конференцияһы (2-се бит).
СТЕНА ГАЗЕТАЛАРЫНЫҢ ЭШ ТӘЖРИБӘЛӘРЕНӘН. Нур Ғәлимов. — Колхозсыларҙың акыл хусы (2-се бит).
РЕСПУБЛИКАБЫҘ МӘКТӘПТӘРЕНДӘ. В. Даутов. — Мәктәп комсомол ойошмаһы — педагогик коллективтың терәге (3-сө бит).
Х. Хангилдина. — Уҡытыу-тәрбиә эштәре үҙәгендә (3-сө бит).
Ғ. Үлмәсов. — Тәбиғәтте үҙҙәренә буйһондороусылар (3-сө бит).
БӨЙӨК МАТЕМАТИК ҺӘМ МЕХАНИК П. Л. ЧЕБЫШЕВ (3-сө бит).
СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. Ғ. Ашрумов. — Яңы культураларҙы тәрбиәләү (4-се бит).
Ә. Байрамов. — Электросварщиктар (4-се бит).
ДҮРТ ДЕРЖАВА СИТ ИЛ ЭШТӘРЕ МИНИСТРҘӘРЕ УРЫНБАСАРҘАРЫНЫҢ ӘҘЕРЛЕК КӘҢӘШМӘҺЕ (4-се бит).
КӨРӘЙЛӘГЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Төҙөк һәм яҡшы юлдар өсөн

Совет хөкүмәте һәм большевиктәр партияһы, транспорттың башҡа төрҙәрен үҫтереү менән бергә, шоссе һәм грунт юлдары селтәрен киңәйтеүгә, уларҙы төҙөк һәм яҡшы хәлдә тотоуға һәр ваҡыт ҙур иғтибар бирә. Шоссе һәм грунт юлдары — иң күп файҙаланылған транспорт. Улар менән беҙҙең республикабыҙҙа ла бик күп районлар, предприятиелар, колхоздар бәйләнеш тота. Тимер юл станцияларынан, йәки пристандарҙан артабан барыу, йөктәр йөрөтөү өсөн дә был юлдар бик кәрәк. Шуға күрә лә уларҙың селтәрен киңәйтеү, юлдарҙы төҙөк һәм яҡшы хәлдә тотоу ҙур хужалыҡ әһәмиәтенә эйә.

Беҙҙең республикабыҙҙа шоссе юлдарының селтәре йылдан-йыл киңәйтелә. Завод һәм фабрикалар, нефть промыслалары, урман промышленносе объекттәре үҙҙәренә барыу юлдарын төҙөйҙәр, уларҙы яҡшырталар. Октябрьский нефтселәре ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр башҡарҙылар. Һәр промыслаға, бораулау участкаларына асфальт юлдар төҙөлгән. Ҡала урамдары ла һәр ваҡыт төҙөк.

Башҡа күп кенә юлдарҙың да һәр ваҡыт төҙөк хәлдә тороуы билдәле. Саҡмағош районы хеҙмәтсәндәре юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса һәр йылды беренсе урынды алып килһәләр. Район территорияһындағы юлдар тигеҙ, күперҙәр төҙөк. Илеш, Шаран, Миәкә, Яңауыл, Ишимбай, Бишбүләк, Белокатай, Нуримановский (?) районлары ла юл эштәре планын үтәүҙә йыл һайын ҙур уңыштарға өлгәшәләр. Ул районларҙың хеҙмәтсәндәре, партия һәм совет органдарының ойошмалары үҙҙәрендәге юлдарҙы төҙөк хәлдә тотоуға етди иғтибар бирәләр, большевиктарса ҡарашалар.

Ошондай уңыштар булыуға ҡарамаҫтан, [illegible] 1950—1951 йылғы [illegible]

трактор станцияһының территорияһындағы юлдар тәртипкә килтерелергә тейеш.

Һәр йәй һайын, яҙғы сәсеү эштәре тамамланғас та, юлдарҙы төҙөкләндереү эштәрен йәйелдереү беҙҙең республикабыҙҙа хәҙер традиция булып әүерелгән. Быйыл да, был эштәрҙе тиҙләтеп, яңы урожай өлгөргәнгә тиклем бөтә юлдарҙы тулы тәртипкә килтереүҙе тәьмин итеү маҡсатында Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты 10 майҙан алып 10 июнгә тиклем удар айлыҡ иғлан иткәйне. Был айлыҡта республика хеҙмәтсәндәре бөтәһе 653 километр юл, 7850 погон-метр күпер ремонтларға тейештәр.

Был ҡарар күп кенә районларҙа яңы хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Колхоздарға һәм ауыл Советтәренә бирелгән график буйынса, сәсеү эштәренән бушаған колхозсылар, транспорт средстволары юл эшенә сыҡтылар. Уларға бөтә төр ярҙам күрһәтелә. Ләкин күпселек районларҙа, айлыҡ башланыуға байтаҡ ваҡыт уҙыуға ҡарамаҫтан, эш тейешенсә йәйелдерелмәгән. Колхоздарға эш күләме бүленмәгән урындар ҙа бар. Өфө, Благовещен, Иглин, Ҡариҙел районларында эшсе көстәрен ойоштороу саралары күрелмәй. Уларҙа юлда эшләүселәргә техник етәкселәр беркетелмәй, юл мастерҙәре был эш менән тейешенсә етәкселек итмәйҙәр. Совет һәм партия органдарының ҡайһы берҙәре, күрәһең, был ҡарарҙан үҙҙәренә тейешле һығымта яһамағандар.

Айлыҡтың срогы аҙайғандан-аҙая. Хәҙер баҫыу эштәренән күп көс бушаны. Ошо ҡалған ваҡыт эсендә юл төҙөкләндереүҙең күләм заданиеларен үтәүҙе тәьмин итеү өсөн бөтә сараларҙы күрергә кәрәк. Был эштә, бөтәһенән элек, колхоздарҙың һәм колхозсыларҙың 1949 һәм 1950 йылдарҙа [illegible]

[illegible]

Өфө ҡала Советендә һәм ВКП(б) ҡала комитетында

Киров районы—социалистик ярышта еңеүсе

1951 йылдың апрель айында промышленность предприятиеларының эш [illegible]

[illegible]

Дим, Моратпал һәм Таналыҡ совхоздары пар һөрөү планын үтәнеләр

[illegible]

Бөтә көс—пар һөрөүгә

[illegible]

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА



Мәскәү. Котельничий яры буйында бейек бина төҙәлешә. Н. Грановский фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Ҙур театрҙың 175 йыллығына ҡарата

Мәскәүҙә СССР Государство Академия Ҙур театрының 175 йыллығы киң билдәләнелә. Театр артистәре клубтарҙа, культура дворецтәрендә ижади отчеттар һәм концерттәр менән сығыш яһайҙар. Мәскәү халҡы совет музыка культураһын үҫтереүҙә театр коллективенә артабан ижади уңыштар теләй.

23 майҙа Государствоның Академия Бәләкәй театрында данлы юбилейгә арналған йыйылыш тантаналы һәм байрам булып үтте.

Сталин премияһы лауреаттары СССР халҡ артисе Н. С. Голованов һәм РСФСР-ҙың халҡ артисе И. Ф. Файер, РСФСР-ҙың халҡ артисе Н. Н. Озеров боронғо ике театр коллективенең күптәнге дуҫлығы тураһында һөйләнеләр. СССР-ҙың халҡ артисе, Сталин премияһы лауреаты К. А. Зубов ҡунаҡтарҙы алда торған юбилей менән ҡайнар ҡотланы. СССР-ҙың халҡ артисткаһы, Сталин премияһы лауреаты А. А. Яблочкина Ҙур театр артистәре менән бергәләп эшләү тураһындағы иҫтәлектәр менән уртаҡлашты.

Һуңынан концерт булды. (ТАСС).

Ҡырпа балығының һирәк осрай торған экземпляры

ДОНДАҒЫ РОСТОВ. (ТАСС). Цеклинский[?]ҙәге Фрунзе исемендәге колхоздың тәжрибәле балыҡсыһы Лебедев тарафынан етәкселек ителгән балыҡ тотоусылар бригадаһы бик ҙур ҡырпа балығы тотто. Уның ауырлығы 703 килограмм, оҙонлоғо 4 метр 38 сантиметр.

Ҡарт балыҡсылар ҡасан да булһа Донда ошондай ҙур балыҡтың осрағанлығын хәтерләмәйҙәр.

Коммунизмдең бөйөк төҙәлештәре өсөн

ЛЕНИНГРАД, (ТАСС). «Пролетарий» заводы коллективы Волгалағы һәм Дондағы бөйөк төҙәлештәр адресына электр станцияларын һәм юғары вольтлы ток үткәреү линияларын, йәшендән һаҡлау өсөн разрядниктәр партияһын срогынан алда ебәрҙе.

Почетлы заказды үтәп, разрядниктәр участкаһы коллективы, заводтың инженерҙәре менән хеҙмәттәшлектә, карборундты байыҡтырыуҙың яңы технологияһын индерҙе. Был, етештереү циклын 4 көнгә ҡыҫҡартты һәм сырье юғалтыуҙы 12 процентка кәметте. Яңы технология 400 киловольтлы көсөргәнешкә сыҙамлы разрядниктәр әҙерләргә мөмкинлек бирҙе.

Йәшендән һаҡланыу аппаратураһы лабораторияһы работниктәре менән хеҙмәттәшлектә участкаһың стахановсылары разрядниктарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеү дискалары өсөн масса әҙерләүҙең яңы технологияһын ҡулландылар, был ике кешене эштән бушатты, электр энергияһына расходты 21 процентка кәметте. Продукция сығарыу тиҙләтелде.

Яңы ысулдарҙы индереү арҡаһында участка графикте уҙып китте һәм коммунизмдең бөйөк төҙәлештәре өсөн өсөнсө квартал иҫәбенән продукция етештерә.

Һуғарыу каналдарын ерҙән һыу үткәрмәҫлек итеп йөҙләү

Коммунизмдең бөйөк төҙәлештәрен тормошҡа ашырыу айҡанлы миллионлаған гектар баҫыуҙарҙы һуғарырға тейешле булған яңы каналдар күп мең километрға һуҙылаcаҡ. Ҡайһы бер каналдар һыуҙы тиҙ үткәреүсе, тиҙ йыуылыусы һәм тиҙ емерелеүсе урындар аша үтәсәк. Бының һуғарыу өсөн билдәләнелгән һыуҙы ҙур күләмдә юғалтыуға килтереүе мөмкин.

СССР Ауыл хужалығы министрствоһы ғилми учреждениеларҙың ошо етешһеҙлекте бөтөрөүгә йүнәлтелгән күп кенә тәҡдимдәрен ҡараны. Грузия гидротехник һәм мелиорация ғилми-тикшеренеү институтының эше юғары баһа алды. Ул каналдарҙы арзанлы һәм ныҡлы масса менән йөҙләүҙе тәҡдим итте, ул ике йоҡа бетон ҡатламынан һәм битум мастикаһының гидроизоляцион ҡатламынан тора. Был каналдарҙың өҫтөн ҡаплауҙа материалдар расходлауҙы ике тапҡырға ҡыҫҡарта.

Институт шулай уҡ ваҡ каналдар һәм һыу йыйылыу урындары ҡаплау ысулын эшләне. Был ысул бик ябай һәм уны һәр бер колхоз һәм совхоз ҡуллана ала. Һыу йыйылыу урынының төбөнә унда һыу ебәргәнгә тиклем ниндәй ҙә булһа үҫемлек массаһы түшәлә һәм тупраҡ менән күмдерелә. Һеҙәмтәлә, төптә һыу үткәрмәй торған ныҡлы ҡатлам барлыҡҡа килә.

(ТАСС).

Илебеҙ баҫыуҙарында

Әзербайжан колхоздары яровой культуралар сәсеү планын үтәнеләр. Үҙған йылдағыға ҡарағанда, 40 мең гектарға артығыраҡ сәселде. Республика өсөн яңы булған мал аҙығы культураһы — судан үләне сәсеү планы дүрт тапҡырға тиң әйтерлек арттырылып үтәлде.

Төньяҡ Осетия колхоздары һәм МТС-тары яҙғы сәсеү планын, үҙған йылдағыға ҡарағанда, 10 көнгә алда үтәнеләр. Кукуруза, көнбағыш, киндер сәсеү һәм картоф ултыртыу буйынса задание байтаҡ арттырылып үтәлде. Даргкохск районының ауыл хужалығы артелдәре массовый рәүештә дегә сәсә башланылар. Ошо культура сәселәсәк майҙан бер ярым тапҡыр самаһы арта.

Сталинград өлкәһенең Ново-Анненский районы ауыл хужалығы артелдәре баҫыуҙарында мул урожай өлгәрә. Арыш баш ҡосто, тиҙҙән яровой ашлыҡтар башаҡҡа ултырасаҡ. Специалистәр, баҫыуҙар мул урожай вәғәҙә итә, тип билдәләйҙәр. Игенселәр сәсеүлектәрҙе хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр. Бөтә уҗым ашлыҡтары ҡый үләндәренән таҙартылды. Яровой ашлыҡтарҙы беренсе утау үткәрелде. МТС ярҙамы менән көнбағыштың рәт араларын культивациялау үткәрелде.

Нефтсе рационализаторҙарҙы бүләкләү

Нефть промышленносе министры Н. К. Байбаков уйлап табыу һәм производствоны рационализациялау буйынса смотрҙар-за-конкурстарҙа актив ҡатнашҡан өсөн нефть предприятиелары коллективтарын бүләкләне.

Беренсе премиялар «Малгобекнефть» һәм «Куйбышевнефтеразведка» трестарына бирелә.

Икенсе һәм өсөнсө премияларҙы алыусылар иҫәбендә «Башнефть» берекмәһе, «Артемнефть» һәм «Азгаз» трестары, «Туймазынефть» һәм «Андижан» трестарының беренсе номерле промыслалары, Грозныйҙағы «Красный молот» машиналар төҙөү заводы, Сарапулдағы Дзержинский исемендәге машиналар төҙөү заводы, «Укргазнефтестрой» тресының беренсе управлениеһе һәм башҡалар бар.

Ер һурғыс ҡеүәтле яңы машина

Мәскәүҙәге М. И. Калинин исемендәге заводта ҙур ҡеүәтле ер һурғысты йыйнау тамамланып килә. Был Волга — Дон каналы өсөн 1951 йыл заданиеһе иҫәбенә ошо предприятие әҙерләргә тейеш булған һуңғы машина.

22 майҙа заводтың стахановсылары ер һурғыс өсөн һуңғы детальде эшләй башланылар. 25 мең ер ҡаҙыусының хеҙмәтен алмаштырыусы был ҙур агрегат бер нисә көндән һуң канал төҙөүселәргә ебәреләсәк.

ОБОРУДОВАНИЕЛӘРҘЕ РАЦИОНАЛЬ ФАЙҘАЛАНЫУ

Большевиктәр партияһы, Совет хөкүмәте һәм иптәш Сталин нефть промышленносен үҫтереү тураһында көндәлек хәстәрлек күрә. Тик һуңғы йылдарҙа ғына нефть промышленносе бик күп яңы һәм камиллаштерелгән оборудованиеләр менән байытылды. Улар араһында нефть промыслалары өсөн яңы типтағы станок-качалкалар, тәрәнлек насостары, штангылар, Молчанов автоматтары кеүек оборудованиеләр һәм приборҙар бар. Уларҙы тулы ҡеүәтендә һәм рациональ файҙаланыу бик ҙур әһәмиәткә эйә.

Ишембай нефтселәре лә, илебеҙ нефтселәре кеүек, яңы типтағы оборудованиеләрҙе производствоға ҡыйыу индереү һәм уларҙы рациональ файҙаланыу өсөн үҙҙәренең бөтә энергияларын һалып эшләйҙәр. «Ишембайнефть» тресы промыслаларында нефть сығарыу эшендә тәрәнлек насостарын дөрөҫ файҙаланыуға айырыуса ҙур иғтибар ителә. Трестың промыслаларында төрлө конструкциялы бик күп тәрәнлек насостары ҡулланыла. Хәҙер беҙ өс төрлө торбалы, манжетлы, ҡуйылмалы насостарҙы ҡулланабыҙ.

Ишембай нефть ятышы шарттарында ФД—2 тибындағы 44 миллиметр диаметрлы торбалы тәрәнлек насосы үҙен яҡшы күрһәтте. Уның хеҙмәт итеү срогы, уртаса алғанда, 200 көнгә етә. Был насос беҙҙең треста ҡулланылған бөтә насостарҙың 84 процентын тәшкил итә. Сығарылған нефть составында һыу күп булған скважиналарҙа манжетлы насостарҙы ҡулланыу файҙалыраҡ. Сөнки уның шыйыҡлыҡ менән тулыу коэффициенты ҙур һәм забойҙа эшләү срогы, башҡа төр насостарға ҡарағанда, оҙонораҡ. Бораулауҙан һуң яңы ғына эксплуатацияға тапшырылған скважиналарҙың забойында балсыҡ иҙелмәһенең һәм шлам ҡалдыҡтарының булыуы насостарҙың бик тиҙ сафтан сығыуына сәбәпсе була. Бындай шарттарҙа ла манжетлы насостарҙы файҙаланыу яҡшыраҡ. Карроэия ныҡ тәьҫир итә торған скважиналарҙа ла был насостар башҡаларҙан бик күп өҫтөн торалар. Беҙҙең 3-сө һәм 4-се номерлы промыслаларҙың коллективтары уларҙың хеҙмәт итеү срогын ярты йылдан да арттырҙылар.

Шыйыҡлыҡты алыу һәм сығарыу клапандары тәрәнлек насостарының иң яуаплы урыны булып һанала. Ишембай нефть промыслаларында клапандарҙың эшләү сроктары төрлө урында төрлөсә. Карроэия бик ныҡ тәьҫир иткән скважиналарҙа уларҙы ике көн һайын алмаштырып торорға тура килә. Трест буйынса, клапандарҙың забойҙа эшләү срогы, уртаса алғанда, ике айҙан кәмерәк иҫәпләнә. Клапандарҙы алмаштырыуға күп кенә ваҡыт талап ителә. 1950 йылда беҙҙең бөтә промыслаларҙа ла скважиналарҙа эшләүсе насостарҙың клапандары 2884 тапҡыр алмаштырылды. Ошо сәбәпле пластан йөҙәрләгән тонна нефть сығарылмайынса ҡалды. Шуға күрә лә беҙҙең нефтселәребеҙ төрлө типтағы клапандарҙы рациональ файҙаланыуҙа һәм уларҙы камиллаштереүҙә актив ҡатнашалар. «Ишембайнефть» тресының инженер-техник работниктары беренсе булараҡ, карроэияға ҡаршы оҙаҡҡа сыҙаусан резина әйберле клапандар ҡулланыуҙы тәҡдим иттеләр. Был клапандарҙың забойҙа эшләү сроктары 40 көндән 70 көнгә етә һәм шыйыҡлыҡ менән тулыу һәләтлектәре ҙур. Шулай уҡ уны эшләп сығарыу ҙа бик осһоҙға төшә. Хәҙер беҙҙә клапандарҙың был төрө киң ҡулланыла.

Скважиналарҙың ер аҫты оборудованиеларен, бигерәк тә тәрәнлек насостарын, тиҙ карроэияланыуҙан һаҡлау өсөн Ишембай нефтселәре забойҙы формалин ҡатышмаһы менән эшкәртәләр. Тәрәнлек насосы клапандарының эшләү сроктарын был 30 процентка арттырырға мөмкинлек бирҙе.

Беҙҙең промыслаларҙа аҙ дебитле скважиналар бик күп. Бөтә скважиналар фондының 70 проценте тейешле режимдә эшләй. Комплексле тикшеренеүҙәрҙән һуң ғына һәр бер скважинаға оптималь режим ҡуйыла һәм, уның нефть биреүсәнлегенә ҡарап, кәрәк диаметрлы насос һайланып алына. Тәрәнлек насостарына кәрәк булған ҡайһы бер ремонт эштәрен беҙҙең нефтселәр үҙҙәре үткәрәләр. Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Вахитов, сафтан сыҡҡан клапандарҙы ҡырып тигеҙләп, уларҙы яңынан файҙаланыу өсөн махсус станок уйлап сығарҙы. Хәҙер бындай станоктар бөтә промыслаларҙа ла ҡулланылалар. Втулкаларҙы шлифовкалау буйынса ла күп кенә эштәр башҡарылды. Бөтә был сараларҙы үткәреү һәр бер насосты 3 — 4 тапҡыр файҙаланырға мөмкинлек бирҙе. Ләкин был өлкәлә етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел. Треста бәләкәй диаметрлы насостар етешмәй, клапандарҙы ремонтлау өсөн махсус станоктар юҡ. Был етешһеҙлектәр нефть сығарыу эшендә күп ҡыйынлыҡтар тыуҙыралар. Шуға күрә улар тиҙ ваҡыт эсендә хәл ителергә тейеш.

«Ишембайнефть» тресының промыслаларында, күбеһенсә, иҫке типтағы СК—7, СК—11, СК—6 маркалы станок-качалкалар эшләй. Ләкин, был станок-качалкаларҙы аҙ дебитле скважиналарҙа ҡулланыу файҙаһыҙ. Сөнки уларҙың ҡеүәте бик ҙур. Шуға күрә лә һуңғы ваҡыттарҙа бындай станок-качалкаларҙы яңы типтағы ябай 2 СКП—1 станоктарына алмаштырабыҙ. Шуны ла әйтергә кәрәк, промыслаларҙа станок-качалкаларҙы запас частәр менән тәьмин итеү бик насар хәлдә тора.

Нефтте тәрәнлек насостары ярҙамында сығарғанда, штангылар бик ҙур роль уйнайҙар. Әлек скважиналарҙа булған аварияларҙың күбеһе штангыларҙың өҙөлөүенән килеп сыға ине. Беҙҙең нефтселәр скважиналарҙы оптималь режимдә эшләтеү, производствоға яңы типтағы станоктар һәм штангыларҙы ҡыйыу индереү, бәләкәй диаметрлы насостар ҡулланыу юлы менән авариялар һанын йылдан-йыл ҡыҫҡарталар. Шулай ҙа штангылар өҙөлөү сәбәпле килеп сыҡҡан авариялар һаны һаман да бар әле.

Хәҙер беҙҙең промыслаларҙа карроэияға ҡаршы тороусан штангылар ҡулланыла башланды. Бындай штангылар, быға тиклем файҙаланылған нормаль штангыларға ҡарағанда, 6 — 10 тапҡырға оҙағыраҡ эшләйҙәр.

Беҙҙең нефтселәр яңы һәм камиллаштерелгән техникаға әлегә-әле тулыраҡ эйә булалар. Промыслаларҙа Молчанов автоматының һаны бик аҙ булыуға ҡарамаҫтан, 1950 йылда 410 скважина Молчанов автоматы ярҙамында ремонтланды.

Ишембай нефтселәре иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе намыҫлы үтәйҙәр. Был көндәрҙә улар бөтә эске резервтарҙы мобилизовать итеп, нефть сығарыуҙы артабан үҫтереүҙә яңы уңыштарға өлгәшеү өсөн стахановсы вахтала эшләйҙәр.

В. Миронов,
«Ишембайнефть» тресының баш инженеры.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Производство мәсьәләләре цех партия ойошмаһының иғтибар үҙәгендә

Завод алдында торған мөһим бурыстарҙы үтәүгә коллективты мобилизовать итеү өлкәһендә цех партия ойошмаһы бик ҙур урын тота. Сөнки ул партия ойошмаһын эшселәр менән тығыҙ бәйләүсе, ойошманың эше һәм тормошо менән уларҙы өҙлөкһөҙ таныштырып барыусы, партия политикаһын туранан-тура эшселәргә еткереп, уның үтәлешен тәьмин итеүсе бер звено булып тора.

Октябрь революцияһы исемендәге судноларҙы ремонтлау заводының 2-се группа цехтары партия ойошмаһы үҙенең бөтә эшмәкәрлеген завод коллективы һәм завод партия ойошмаһы алдында торған мөһим бурыстарҙы уңышлы хәл итеүгә йүнәлткән. Был цех партия ойошмаһының секретары иптәш А. Ганюшкин эште активҡа, коммунистарға таянып, алдан яҡшылап уйлап төҙөлгән план буйынса алып бара. Бында партия йыйылыштары регуляр үткәрелә, коммунистарҙың барыһы ла партия уҡыуҙары менән солғап алынған, һәр бер коммунист партия поручениеһын үтәй. Цехта стена газетаһы һәм боевой листоктар регуляр сығарылып тора, көн һайын эшселәр өсөн политинформациялар, тыҫҡырып газета уҡыуҙар үткәрелә. Бөтә коллектив социалистик ярыш менән солғап алынған.

Заводтың икенсе группа цехтары партия ойошмаһы производство алдынғыларының эш тәжрибәләрен таратыуға бик ҙур иғтибар бирә. Миҫал өсөн юғары квалификациялы иң яҡшы котельщиктарҙан коммунист Н. Герасимов һәм В. Волков иптәштәрҙе алырға мөмкин. Иптәш Герасимов судно котелдарына скула табаҡтары урынлаштырыу эшендәге үҙенең бай тәжрибәһе менән Балашов, Гуськов, Бессмертный иптәштәрҙе таныштыра. Ә иптәш Волков йәш котельщиктарҙы пар котелдарына капиталь ремонт үткәрергә өйрәтә.

Быйыл яҙғы ремонт сезонында, корпус тимерҙәренең бик һуңлап килеүе арҡаһында, судно корпустарына капиталь ремонт үткәреү эше өҙөлөү ҡурҡынысы аҫтында ҡалғайны. Быны цех партия бюроһы тиҙ генә үҙенең ултырышына ҡуйып тикшерҙе. Бюро ултырышына котельщиктар бригадаларының бригадирҙары ла саҡырылды һәм уларҙың алдына ремонт эшен срогынан алда тамамлауҙы тәьмин итеү бурысы ҡуйылды.

Бригадирҙарҙан Балашов, Герасимов һәм Стогов иптәштәр бюро тарафынан йөкмәтелгән бурысты үтәргә социалистик йөкләмә алдылар.

Бюро ултырышынан һуң был мәсьәлә партия йыйылышына ҡуйып тикшерелде һәм цех коллективы был өҙәлекте ашығыс бөтөрөү өсөн көрәшкә мобилизовать ителде. Һөҙөмтәлә судно корпустарына тулы ремонт үткәреү эше срогынан бик күпкә алда үтәлде.

Был бәләкәй генә миҫал партия һәм актив йыйылыштарының коммунистарҙы тәрбиәләүҙә ғәйәт ҙур роль уйнағанлығын бик асыҡ күрһәтеп тора. Шуға күрә был цех партия ойошмаһы үҙенең эшендә партия йыйылыштарын регуляр һәм юғары идея-политик кимәлдә үткәреүгә айырыуса ҙур иғтибар бирә.

Судноларҙы ремонтлау заводының 2-се группа цехтары партия ойошмаһы отчет-һайлау йыйылышы булып үткәндән һуң 5 йыйылыш үткәрҙе. Был йыйылыштарҙа цех тормошоноң иң мөһим мәсьәләләре ҡаралды.

Партия ойошмаһының һуңғы йыйылышында «Профсоюз ойошмаһының эше» тураһындағы мәсьәлә ҡаралды. Йыйылышҡа алдан уҡ яҡшы әҙерлек саралары үткәрелде. Партбюро тарафынан ебәрелгән коммунистар профсоюз ойошмаһының эшен ентекләп тикшерҙеләр һәм уның планһыҙ эшләүен, политик-массовый эшкә тейешле иғтибар бирмәүен, социалистик йөкләмәләрҙең үтәлешен ваҡытында тикшереп бармауын, профсоюз члендәренең политик белемдәрен күтәреү өсөн көрәшмәүен һәм башҡа күп кенә етешһеҙлектәргә юл ҡуйыуын астылар. Көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәләне тулыһынса әҙерләгәндән һуң коммунистарға партия йыйылышының үткәреләсәк көнө, ваҡыты һәм урыны тураһында өс көн алдан белдерелде. Шулай итеп, һәр бер коммунисҡа йыйылышҡа әҙерләнеп барырға мөмкинлек тыуҙырылды. Көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәләнең актуаль булыуы йыйылышта тағы ла асығыраҡ күренде. Коммунистар, ҙур активлек менән бер-бер артлы сығыш яһап, профсоюз ойошмаһының эшендәге етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләнеләр һәм, уларҙы бөтөрөү юлдарын күрһәтеп, конкрет тәҡдимдәр индерҙеләр.

Йыйылыш үткәс тә унда ҡабул ителгән ҡарарҙы үтәү өсөн коммунистар ныҡышмалы көрәш башланылар. Һөҙөмтәлә профсоюз ойошмаһының эшендәге етешһеҙлектәрҙең күбеһе ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бөтөрөлдө һәм заводтың 2-се группа цехтарының социалистик йөкләмәләрен үтәүгә өлгәшеүе, ярышта алдынғы урындарҙың береһен алыуы тәьмин итеҙе.

Партия ойошмаһы хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, продукция эшләп сығарыу кимәлен үҫтереү, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм сифатын яҡшыртыу тураһындағы мәсьәләләрҙе тикшерҙе.

Котелдарҙы ремонтлау һәм электросварка эштәренең сифатын яҡшыртыу тураһындағы мәсьәлә партия йыйылышында ҡаралғандан һуң коммунистар судноларҙы иң яҡшы сифатлы итеп ремонтлау өсөн социалистик ярыш ойоштороуҙа инициатор булдылар һәм улар стахановсы хеҙмәт өлгөләре күрһәтә башланылар. Электросварщиктарҙан Абдуллин, Ларионов иптәштәр айлыҡ заданиеларен 240 процентҡа, котельщиктарҙан Вәлиәхмәтов, Гуськов иптәштәр көндәлек нормаларын 150—200 процентҡа үтәп иң яҡшы сифатлы продукция бирәләр.

Коммунистарҙың партияһыҙ эшселәр менән берлектә өҙлөкһөҙ ижади эҙләнеү алып барыуҙары һәм партия ойошмаһының ойоштороусан эшмәкәрлегенең көндән-көн яҡшыра барыуы судноларҙы ремонтлау заводының 2-се группа цехтарында айлыҡ пландарҙы һәр ваҡыт арттырып үтәү мөмкинлеген тыуҙырҙы.

Хәҙер 2-се группа цехтарҙың коллективы стахановсы цехтар исеме алыу өсөн социалистик ярышҡа ҡушылды.

А. Мансуров,
ВКП(б)-ның Ленин райкомы инструкторы.

Социалистик ярыштың көсө

Беҙ баҫыу эштәре башланыр алдынан совхоздың бөтә бүлексәләрендә лә Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бупеевтең саҡырыуын өйрәнеүҙе ойоштороҡ. Совхоз механизаторҙары Бупеев өлгөһендә күтәренке йөкләмәләр алдылар.

Совхоз партия ойошмаһы март айында уҡ үҙенең асыҡ йыйылышында «Совхоздың эске резервтәре һәм уларҙы файҙаланыу» тураһындағы мәсьәләне тикшерҙе. Был йыйылышҡа агрономдар, механиктар һәм бригадирҙар саҡырылдылар. Йыйылышта үткән йылда файҙаланылмаған күп кенә резервтәр һәм мөмкинлектәр асылды һәм уларҙы ҡулланыу юлдары билдәләнде.

Быйыл сәғәт графигы менән эшләүгә һәм алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен киң ҡулланыуға айырыуса иғтибар бирергә кәрәклеге асыҡланды. Яҙғы баҫыу эштәре башланғас та тағы бер партия йыйылышы үткәрелде. Был йыйылышта «Баҫыу эштәренең тәүге көндәрендәге етешһеҙлектәр һәм уларҙы бөтөрөү юлдары» тигән мәсьәлә ҡаралды. Коммунистар был мәсьәләне тикшереүҙә актив ҡатнаштылар. Йыйылышта 9 кеше сығыш һөйләне.

Партия ойошмаһы коммунистарҙы яҙғы баҫыу эштәренең мөһим участкаларына беркетте һәм уларҙың күбеһенә агитаторлыҡ эшен йөкмәтте. Яҙғы сәсеү эштәре осорона төҙөлгән агитацион-массовый эш планы партия йыйылышында раҫланды. Быларҙың бөтәһе лә социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйелдереүгә ярҙам итте.

Яҙғы сәсеү осоронда профсоюздың эшселәр комитеты (председателе иптәш Хазеев) механизаторҙарҙың социалистик ярышын ойоштороуҙа ҙур һәләтлек күрһәтте. Ул һәр бер бригаданың йөкләмәһен ҡағыҙға яҙып, баҫыу станына элеп ҡуйҙы. Эштең үтәлешен күргәҙмә таҡтаһына яҙып барҙы. Бында һәр бер трактористең һәм бригаданың эше күренеп тора. Партия һәм профсоюз ойошмалары смена нормаларын арттырып үтәүсе трактористарға арнап «Молния» сығарып торҙо. Беренсе «Молния» совхоз механизаторҙарына «Самарск» бүлексәһенең трактористы Сафа Истамғәлиндең С—80 тракторы менән сменаға 22 гектар ер һөрөүе тураһында хәбәр итте. Унан һуң механизаторҙар көн һайын «Молния» аша баҫыуҙағы ҙур уңышлыҡтар менән танышып торҙолар. Был, уларҙы намыҫлы хеҙмәткә дәртләндереүсе көс булды. Һөҙөмтәлә коммунист иптәш Огарков сменаға 25 гектар, Касьянов 30 гектар ер һөрөүгә өлгәштеләр, ә иптәш Мокроусов үҙ агрегаты менән көнөнә 180-200 гектар иген сәсте.

Бюро ултырышында агитаторҙарҙың отчетын тыңлау агит-массовый эште яҡшыртыуға тағы ла ярҙам итә. Беҙ сәсеү осоронда «Центральный» бүлексәһе агитаторы ВЛКСМ члены иптәш Невзоровтың отчетын тыңланыҡ. Был механизаторҙар араһында яҙғы сәсеү осоронда агитацион-массовый эште яҡшыртыуға ярҙам итте.

Совхозда беҙ стена газетаһы һәм боевой листоктар сығарып торҙоҡ. Стена газетаһы һәм боевой листоктар ярышты йәйелдереүҙә партия ойошмаһының ярҙамсыһы булдылар.

Х. Баимов,
Әбйәлил районы «Красная Башкирия» совхозы партия ойошмаһы секретары.

СТЕНА ГАЗЕТАЛАРЫНЫҢ ЭШ ТӘЖРИБӘЛӘРЕНӘН

Колхозсыларҙың яҡын дуҫы

Бына, бик ентекләп һәм иғтибар менән әйбәт ҡуйылған газеталар ята. Улар аҡ, һаһел, зәңгәр ҡағыҙҙарға яҙылғандар. Почерктар йә бик төҙ, йә һулдан-уңдараҡ ауыштырып яҙылған, ләкин һәр ҡайһыһы асыҡ һәм аңлайышлы. Газетаның бер номере ҙур, икенсеһе бәләкәйерәк, ә уның һәр береһен әҙерләп сығарыр өсөн иң тиклем хеҙмәт һалынған.

Был биттәрҙе уҡығанда һинең күҙ алдыңа тере кешеләр, уларҙың намыҫлы хеҙмәттәре килеп баҫа һәм һин шунда уҡ, кешеләрҙең ныҡышмалылығын, хеҙмәткә ынтылышын хис итәһең. Һәр бер һүҙҙең мәғәнәһендә большевистик маҡсатҡа ынтылыштың принципиаль линияһы, фекерҙәр эҙмә-эҙлелеге ята.

Һүҙ «Үрнәк» колхозы партия ойошмаһының һәм колхоз правлениеһының органы «Коммунизмға» исемле стена газетаһы тураһында бара. Был стена газетаһының редколлегияһы беренсе тапҡыр бынан 17 йыл элек — 1934 йылда һайланғайны. Дөрөҫ, уның редколлегияһына ингән тәүге кешеләр инде бер нисә тапҡыр алмашылғандар, ләкин газета бер туҡтауһыҙ сығып килә.

Ошо ваҡыттан бирле стена газетаһы колхозсыларҙы мул урожай өсөн, малсылыҡты үҫтереү һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү, колхозды күп тармаҡлы бай хужалыҡ итеү өсөн көрәшкә өндәй. Уның асыҡ һәм ябай тел менән ҡыҫҡа ғына итеп яҙылған мәҡәләләре алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалай, колхозсыларҙы намыҫлы хеҙмәткә рухландыра, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн көрәшә.

Колхозсылар, коллектив тормош менән тығыҙ бәйләнгән боевой газетаны тәүҙән уҡ яраттылар. Бик күп алдынғы кешеләр газетаның хәбәрселәре булып әүерелделәр. Стена газетаһының иң тәүге номерҙәре сыға башлау менән уҡ колхоз члендәре уны маҡсатҡа ҡыйыу ынтылыусан, конкрет һәм алға саҡырыусы газета икәнлеген күрҙеләр.

Һуғыш йылдарынан элек, газетаның Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенә арнап сығарылған номере уҡыусыларҙы үҙенә айырыуса ныҡ йәлеп итте. «Коммунизмға» газетаһының был номерендә баҫыу алдынғыларының өлгәшеүҙәре, малсылыҡтағы яңы уңыштары тураһында яҙылғайны. Ферма мөдире иптәш Хөсәинов үҙенең мәҡәләһендә Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашыусы алдынғыларҙың бер һыйырҙан 6-шар мең литр һөт һауып алыуҙары тураһында һөйләгәйне. Фермала эшләүсе башҡа стахановсылар ҙа газетала сығыш яһанылар. Улар үҙҙәренең уңыштары һәм тағы ла яҡшыраҡ эшләйәсәктәре тураһында һөйләгәндәр. Газета ошо номерҙә үк малсылыҡтың продукт биреүсәнлеген күтәреү өсөн көрәште баһалап еткермәүселәрҙе ҡаты һәм дөрөҫ тәнҡитләгән.

«Коммунизмға» газетаһы алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен, уларҙың социалистик йөкләмәләрен урынлаштырыу менән бергә, йөкләмәләрҙең үтәлеше тураһында ла систематик рәүештә яҙып бара. «Үрнәк» колхозы һәр бер һыйырҙан һөт һауып алыу кимәлен 300 литрға арттырған, малдар һаны байтаҡ үҫкән. Был уңыштарҙа стена газетаһының да ҙур хеҙмәте бар.

Һуғыш башланды... Кем ҡулына ҡорал тота ала, бөтәһе лә 1941 йылда фронтҡа киттеләр. Ауылда ҡарттар һәм ҡатын-ҡыҙҙар, йәш үҫмерҙәр генә тороп ҡалдылар. Стена газетаһы ул йылдарҙа йәш үҫмерҙәргә шундай саҡырыу менән мөрәжәғәт итте:

— Ҡыҙҙар һәм үҫмерҙәр, трактористлек һөнәренә өйрәнегеҙ!

Был ҡағыҙҙа ғына ҡалған саҡырыу булманы. Икенсе бер номерҙә үк 16 йәшлек ҡыҙҙар — Вафа Посонова һәм Гөлминаз Әхмәтова — газетала сығыш яһап, былай тип яҙҙылар:

«Беҙ икебеҙ ҙә элек прицепщиктар булып эшләнек. Трактористар фронтҡа киттеләр. Уларҙы кем алмаштырырға тейеш? Беҙ! Ныҡ уйлағандан һуң хәҙер беҙ трактор руле артына ултырырға ҡарар иттек. Ҡыҙҙар һәм үҫмерҙәр, беҙ һеҙҙе лә тракторист булырға саҡырабыҙ!».

Уларға механиктар ярҙам иттеләр һәм бер айҙан һуң ҡыҙҙар икеһе лә трактор йөрөтә башланылар. Улар хатта элекке стахановсы трактористарҙың да нормаларын уҙып киттеләр.

Вафа менән Гөлминаз артынан башҡалар ҙа эйәрҙеләр. Яңы профессияны үҙләштереү өсөн башланған хәрәкәт ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла таралды. Кешеләр эш эсендә өйрәнделәр, ауырлыҡтарҙы еңделәр һәм бөтә халыҡ менән бергә дошманды еңер өсөн көрәштеләр. Хәҙер был ҡыҙҙар икеһе лә колхоз производствоһының алдынғы кешеләре.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа стена газетаһында колхоз хужалығын тиҙерәк аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү өсөн көрәш йәйелдерелде. Ул коллектив хеҙмәт тыуҙырған иң яҡшы, перспективалы методтарҙы яҡлай һәм пропагандалай. 1948 йылдың июнь айында «Коммунизмға» газетаһында комбайнер иптәш Ҡорбановтың мәҡәләһе сыҡты.

«Беҙҙең бик күптәребеҙ, — тип яҙған иптәш Ҡорбанов, — һуғыш йылдарында комбайндарҙы урожай йыйнауға әҙерләүҙә, ремонттың сифатына зарар килтереп, артыҡ ашыҡтылар. Был бер кем өсөн дә сер түгел. Ҡайһы берәүҙәр бындай зарарлы ашығыуҙы планды тиҙерәк үтәү, тип аталылар. Дөрөҫ түгел, мин сифатҡа ныҡ иғтибар итәм һәм был миңә планды ваҡытынан алда үтәргә мөмкинлек бирә. Урожай йыйнау ваҡытында ла техник ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ тормошҡа ашырам. Бына шуға күрә лә сезон заданиеһын йыл һайын арттырып үтәйем, юғалтыуҙарға юл ҡуймайым. Башҡалар ҙа шулай эшләй аламы?..»

— Эйе, эшләй ала! — тип яуап бирә уға үҙенең мәҡәләһендә тракторист иптәш Хоҙайбирҙин. Ул үҙенең тәжрибәләре нигеҙендә, шулай эшләп булғанды ышандырырлыҡ итеп һөйләп бирә.

Механизаторҙар араһында [illegible]ҙы сифатлы итеп ремонтлау [illegible] башланды. Стена газетаһы [illegible] ярыш барышын номерҙан-номерға [illegible]тып барҙы, артта ҡалыусыларҙы [illegible], алдынғыларҙың тәжрибәләрен [illegible]ратты. Һөҙөмтәлә трактористар [illegible] Зайбирҙин, Ғәнәнов, Посонов, Ҡорбанов иптәштәр ярышта [illegible]тылар һәм Усть-Икин МТС-ы [illegible]ны тарафынан бүләкләнделәр. [illegible] торҙар ул йылды механизация средстволарына экономия яһа[illegible].

«Коммунизмға» стена газетаһы уҡыусыларына колхозсыларҙан нимә талап ителгәнлеге тураһында һәм ябай тел менән һөйләп бирә [illegible] тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүгә [illegible]ранланған.

Бына ҡайһы бер хәбәрҙәренең [illegible]калары: «Урожай йыйнау машиналарын тулы көйәтендә файҙаланырға», [illegible] орлоҡтарын әҙерләү эшен туҡта[illegible] «Малсылыҡтың продукциялеген [illegible] өсөн көрәш — бөтә общественно[illegible]» һәм башҡалар. Был заголовкалар [illegible] яҙылған мәҡәләләр кире ҡаҡғыһыҙ фактлар, анализдар менән нығытылған. Мәсәлән, ни өсөн һуңғы [illegible] график үтәлмәгән? Сөнки график төҙөлгән көйөнсә генә ҡалған. Уны [illegible] колхозсыларға аңлатмағандар, [illegible] ҡаршы көрәш [illegible].

Газетаның һәр бер номерендә «[illegible] колхоз алдынғылары» тигән рубрика аҫтында хәбәрҙәр урынлаштырыла. [illegible] рубрика аҫтында үҙҙәренең эш [illegible]ләре менән производство процесс[illegible]ләйтеүсе кешеләр тураһында, [illegible] икеләтә-өсләтә арттырып үтәүсе[illegible] тураһында һөйләгән мәҡәләләрҙе күрә[illegible].

Хәҙер стена газетаһына бик ҙур [illegible] мәсьәләләрҙе күтәреп сығырға тура [illegible]. Ул малсылыҡты үҫтереүҙең өс йыл[лыҡ] планын үтәү өсөн көрәштең барышын йыш яҡтырта. Күптән түгел уның бер номере сәсеү алдынғыларына арнап [illegible]рылды. «Коммунизмға» газетаһы урожай өсөн көрәш темаһына [illegible] яһап, алдынғы бригадалар һәм колхоз[illegible]лар, эш һөймәүсе айырым кешеләр [illegible]һында һөйләп бирҙе. Газетала үҙҙәренең конкрет, эшлекле фекерҙәре менән [illegible] мөдирҙәре, баҫыусылыҡ бригадаһы бригадирҙәре, механизаторҙар һәм колхоз[illegible] сығыш яһайҙар.

«Коммунизмға» газетаһы «Үрнәк» колхозы эргәһендәге партия ойошмаһы[illegible]ғаны. Партия ойошмаһы газета менән темалы һәм конкрет етәкселек итә. [illegible] иғтибарын колхоздың общественный малсылығын үҫтереүгә һәм мул урожай [illegible]реп алыуға, әрелтелгән колхоздың [illegible] өлгәшеүҙәрен һөйләүгә юнәлтә. Был [illegible] газетаһының яуаплы редакторы коммунист иптәш Хәйретдинов партия [illegible]ченнеһен намыҫ менән үтәү өсөн [illegible] энергияһын һәм һәләтлеген бирә [illegible].

Нур Ғәли[illegible],
Мәсетле районы.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бөтөрөргә"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 60-сы номерендә Мәләүез районындағы күп кенә колхоздарҙың яҙғы сәсеүгә насар әҙерләнеүҙәре тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы ВКП(б)-ның Мәләүез район комитеты редакцияға хәбәрҙә килтерелгән факттарҙың бик урынлы булыуы һәм асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ҡарата үҙ ваҡытында практик саралар күрелеүе тураһында белдерҙе.

Газетала баҫылған был хәбәр колхоз председателдәренең район кәңәшмәһендә тикшерелгән һәм эштә артҡа ҡалыусы ауыл хужалығы артелдәренә практик ярҙам күрһәтеү өсөн район партия һәм совет активынан күп кенә иптәштәр командировать ителгән. Күр[illegible] ошо саралар һөҙөмтәһендә күп кенә колхоздар сәсеүҙе ойошҡанлыҡ менән [illegible]лап ебәрҙеләр. Хәбәрҙә тәнҡит ителгән «Новострой», «Путь Ленина», [illegible] һәм Сталин исемендәге колхоздар [illegible] эштәрендә һиҙелерлек һынылыш [illegible]дар.

РКП(б)-ның унынсы конференцияһы

(Асылыуына утыҙ йыл тулыуға ҡарата)

Бөгөн РКП(б)-ның Бөтә Россия унынсы конференцияһының асылыуына 30 йыл тулды. Был конференция 1921 йылдың 26 майынан алып 28 майына тиклем Кремлдә үтте.

Унынсы Бөтә Россия конференцияһы большевиктар партияһының һәм Совет государствоһының тормошонда, илебеҙҙә социалистик общество төҙөү өсөн көрәштә ҙур тарихи роль уйнаны. Ул партиябыҙ граждандар һуғышы осоронан тыныс хужалыҡ төҙөлешенә, социалистик экономиканың фундаментын төҙөүгә күсеүҙе ғәмәлгә ашырған көсөргәнешле обстановкала йыйналды. Большевиктар партияһы үҙенең 1921 йылдың мартында булып үткән X съезында хәрби коммунизм политикаһынан яңы экономик политикаға күсеү тураһында тарихи ҡарар ҡабул итте. Продразверстканы продналог менән алмаштырыу НЭП-тың үҙәк мәсьәләһе булды. Бурыс — эшселәр синыфы менән крәҫтиәндәр араһында дөрөҫ экономик мөнәсәбәттәр урынлаштырыуҙан, яңы экономик нигеҙҙә эшселәр менән крәҫтиәндәрҙең союзын нығытыуҙан тора ине. Партия һәм государствоның бөтә сараларҙы бына ошо политик бурысҡа буйһондоролғайны.

Иптәш Сталин яңы экономик политиканы классик рәүештә билдәләне. «НЭП, — тип күрһәтте иптәш Сталин, — ул пролетариат государствоһының махсус политикаһы, ул командалыҡ итеү юғарылыҡтары пролетариат государствоһы ҡулында булған хәлдә капитализмға юл ҡуйыуға иҫәп тота, капиталистик һәм социалистик элементтарҙың көрәшенә иҫәп тота, капиталистик элементтар зарарына социалистик элементтарҙың роле үҫеүгә иҫәп тота, социалистик элементтарҙың капиталистик элементтарҙы еңеүенә иҫәп тота, синыфтарҙы бөтөрөүгә, социалистик экономиканың фундаментын төҙөүгә иҫәп тота». (И. В. Сталин. Әҫәрҙәр, 7 том, 364-се бит).

X партия съезының тарихи ҡарарҙары менән ҡоралланған большевиктар партияһы ғәйәт ҙур эш йәйелдерҙе.

Большевиктар партияһының дошмандары НЭП-ты ғәмәлгә ашырыуҙы өҙергә, большевиктар партияһын тарҡатырға, пролетариат диктатураһын юҡ итергә һәм беҙҙең илебеҙҙә капитализмды реставрацияларға маташтылар. Меньшевиктар һәм эсерҙәр аяҡҡа баҫтырыу осороноң ҡыйынлыҡтарын большевиктар партияһына ҡаршы политик көрәш маҡсатында файҙаланырға тырыштылар. Улар большевиктарҙы коммунизм принциптарынан баш тартыуҙа һәм капитализмға кире ҡайтыуҙа оятһыҙ рәүештә ғәйепләнеләр. Троцкийсылар һәм бухаринсылар, «НЭП — социалистик төҙөлештән баш тартыу, капитализмға кире ҡайтыу ул», тип ҡысҡырындылар. Совет государствоһы дошмандарының бөтә был көрәше илебеҙҙе капитализм юлына бороуға иҫәпләнгәйне. Ләкин дошмандарҙың яуыз пландары емерелде.

Яңы экономик политиканы урындарҙа практик ғәмәлгә ашырыу ғәйәт ҙур ҡыйынлыҡтарға осраны. Дошмандар массаны буталдырырға, уларҙы Совет государствоһының политикаһына ҡаршы ҡуйырға тырыштылар. Урындарҙағы күп кенә работниктар яңы экономик политиканың асылын ныҡлап төшөнөп етмәгәйнеләр әле.

Революцияның яҙмышын хәл итеүсе мөһим тарихи борылош етерлек тиклем аңлатылмауын, ә партия дошмандарының ленинсе линияны боҙоп күрһәтеүҙәрен иҫәпкә алып, 1921 йылдың 10 майында партияның Үҙәк Комитеты нәүбәттән тыш X Бөтә Россия партия конференцияһын саҡырырға ҡарар итте.

В. И. Ленин үҙенең конференцияла һөйләгән докладында былай тип күрһәтте: «Продналог айҡанлы билдәләнгән политика урындарҙа ғәйәт ҙур дәрәжәлә аңлатылмаған, хатта бер ни тиклем төшөнөлмәгән көйөнсә ҡала. Был политика ғәҙәттән тыш мөһим булғанлыҡтан, уны конференцияла өҫтәмә рәүештә тикшереү бик кәрәкле эш тип табылып, конференцияны срогынан алда йыйнарға ҡарар ителде» (В. И. Ленин. Әҫәрҙәр, 32-се том, 4-се баҫма, 380-се бит).

Урындағы партия һәм совет работниктарының яңы экономик политиканың асылын ныҡлап төшөнеүҙәренә һәм уны тайпылышһыҙ ғәмәлгә ашырыуҙарына өлгәшеү конференцияның төп маҡсаты булды. Партияның X Бөтә Россия конференцияһы был бурысты уңышлы хәл итте, тип Ленин бик ныҡ әйтеп үтте.

Конференция яңы экономик политиканы ғәмәлгә ашырыуға бәйле булған мөһим мәсьәләләрҙе тикшерҙе. Конференцияла түбәндәге докладтар тыңланылды: 1) Экономик политика (продналог, кооперация, финанс реформаһы тураһында, ваҡ промышленность); 2) Хәҙерге моментта меньшевиктарҙың һәм эсерҙәрҙең роле; 3) Коммунистик интернационалдың өсөнсө конгресы.

Төп мәсьәлә — экономик политика тураһындағы мәсьәлә буйынса доклад менән В. И. Ленин сығыш яһаны. Ул яңы экономик политиканың асылын бик яҡшы нигеҙләне һәм большевиктар партияһын хәрби коммунизм политикаһынан яңы экономик политикаға күсеүҙең ғилми программаһы менән ҡоралландырҙы.

НЭП, тип күрһәтте Ленин, капиталистарға түгел, ә крәҫтиәндәргә уступка булып тора, ул бөтәһенән дә элек эшселәр синыфы менән крәҫтиәндәрҙең бәйләнешен нығытыуға йүнәлтелгән. НЭП беҙҙең экономикабыҙҙың күп укладлылығын бөтөрөүҙә, хужалыҡтың социалистик секторының еңеүенә, социалистик экономиканың фундаментын төҙөүгә иҫәп тота ине. Ленин, партия дошмандарына отпор биреп, уларҙың НЭП-ты дошмандарса аңлатыуҙарын фашлап, НЭП серьез һәм оҙаҡ срокҡа индерелгән, тип бик ныҡ әйтте.

Партия конференцияһы дошмандарҙың «партия ауыр индустрияны онотто» тигән яла яғыусы уйҙырмаларын фаш итте. Ленин былай тине: «...Был эре промышленносте күпме лә булһа серьез һәм систематик рәүештә аяҡҡа баҫтырыуға күсеү өсөн ваҡ промышленносте аяҡҡа баҫтырырға кәрәк» (шунда уҡ, 386-сы бит).

Ваҡ промышленность крәҫтиән хужалығына һис кисекмәҫтән ярҙам күрһәтә һәм уның етештереү көстәрен күтәрә ала. Конференция, эшселәр өсөн етерлек аҙыҡ-түлек, алға киткән ауыл хужалығы булмайынса тороп, эре промышленносте уңышлы үҫтереү мөмкин түгел, тип күрһәтте. Бына ни өсөн партияның көсө ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға мобилизацияланды, сөнки шунһыҙ илебеҙҙе индустриялаштырыу мөмкин түгел ине.

Конференция кооперацияға ҙур иғтибар бирҙе, тауар алмашыуҙы үткәреүҙә кооперация төп аппарат булып тора, тип күрһәтелде. Кооперацияға әҙерләүҙәр үткәреү, урындағы промышленносте үҫтереү һәм бөтә хужалыҡ тормошон күтәреү буйынса киң мөмкинлектәр бирелде.

Сауҙа, дөрөҫ тауар алмашыуҙы ойоштороу мәсьәләләре конференция эшендә айырыуса мөһим урын тотто. Хәҙерге тарихи этапта, тип күрһәтте Ленин, сауҙа шундай мөһим звено булып тора, яңы экономик политиканың бөтә бурыстарын хәл итеү өсөн уға бөтә көс менән тотонорға кәрәк.

Партияның X Бөтә Россия конференцияһы ойоштороу эше мәсьәләләренә ҙур иғтибар бирҙе. Ул партияның ойоштороу эшендә яҡындағы бурыстары тураһында В. М. Молотовтың докладын тыңланы. Конференция РКП(б) Үҙәк Комитетының эш планы тураһында махсус резолюция ҡабул итте. Еңеү бер ваҡытта ла үҙенән-үҙе килмәй, тип өйрәтәләр Ленин менән Сталин, дөрөҫ политик линия бирелгәндән һуң эштең уңышы ойоштороу эшенә, кешеләрҙе дөрөҫ һайлап алыуға һәм ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшереүгә бәйле булып тора.

Бына ошо ленинсе-сталинсе күрһәтмәләр нигеҙендә партия үҙенең бөтә эшен яңы бурыстарға ярашлы итеп ҡайтанан ҡорҙо.

Партияның X конференцияһы РКП(б) Үҙәк Комитетына һәм партияның бөтә ойошмаларына политик агитацияны һәм пропаганданы көсәйтеү бурысын йөкмәтте. Идеологик эште күтәреү партияның үҙәк бурыстарынан береһе булып тора ине. 1921 йылдың авгусында РКП(б) Үҙәк Комитеты иптәш Сталинға партия Үҙәк Комитетының агитация һәм пропаганда бүлегенең эшенә дөйөм етәкселек итеүҙе тапшырҙы. Был үҙе генә лә партиябыҙҙың коммунистарҙы идеологик яҡтан сыныҡтырыу мәсьәләләренә ниндәй ҙур әһәмиәт биреүен асыҡ күрһәтә.

Партияның X Бөтә Россия конференцияһы партия политикаһының дөрөҫлөгөн раҫланы, НЭП-тың асылын дошмандарса боҙоуҙарҙы фаш итте һәм социалистик экономиканың фундаментын төҙөү өсөн көрәштә партияны ҡоралландырҙы. Партияның бөтә гигант күләмдәге эшен Ленин конференцияла юғары фәндәрҙе өйрәнеүҙең 4 йыллыҡ курсы менән бик образлы сағыштырҙы. Беренсе курс — үткән быуаттың 70-се йылдарынан 1903 йылға тиклем, икенсе курс — 1903 йылдан 1917 йылға тиклем, өсөнсө курс 1917 йылдан 1921 йылға тиклем булды. Яңы экономик политикаға күсеүҙе Ленин дүртенсе курс тип иҫәпләне. Ул былай тине: «Беҙ өсөнсө курстан дүртенсе курсҡа күсеү экзаменын бирәбеҙ; ә унан һуң [illegible] бөтә дүртенсе курсты [illegible] үтергә кәрәк; ул саҡта беҙ ысын-ысын[illegible]дан еңелмәҫлек буласаҡбыҙ» (шунда [illegible] 407—408-се биттәр).

Беҙҙең илебеҙҙә социализмдың [illegible] совет халҡының немец-фашист баҫҡынсыларына ҡаршы көрәштә бөтә [illegible] әһәмиәтле тарихи еңеүе большевиктар партияһының һәм Совет государствоһының юғары фәндәрҙең дүртенсе курсын бик яҡшы үтеүҙәрен гүзәл раҫланы. Беҙҙең партиябыҙ, совет ҡоролошо, [illegible] еңгән социализм бөйөк тарихи һынауҙы уңышлы үтте.

Большевиктар партияһының [illegible] аҡыллы политикаһы совет халҡының тарихи еңеүҙәрен тәьмин итте. [illegible] еңеүле социалистик төҙөлештең [illegible] тәжрибәһе ғәйәт ҙур халыҡ-ара әһәмиәткә эйә. НЭП — бөтә илдәрҙә социалистик революцияның котолғоһоҙ фазаһы ул. [illegible]нен баҙар бәйләнештәре һәм был бәйләнештәрҙе файҙаланыуы менән экономик политика төгө йәки был [illegible] жәлә пролетариат диктатураһы [illegible] һәр бер капиталистик ил өсөн [illegible] кәрәкле» (Сталин. Әҫәрҙәр, 11-се [illegible] 145-се бит).

Был ленинсе-сталинсе положение[illegible] дөрөҫлөгө тарихи үҫештең бөтә [illegible] менән раҫланды. Социалистик экономиканың фундаментын һала башлаған [illegible] һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европаның [illegible] демократияһы илдәренең тәжрибәһе асыҡ күрһәтә.

Советтар Союзы һуғыштан һуңғы [illegible]ренсе биш йыллыҡты уңышлы [illegible] Социализм төҙөүҙе тамамлау һәм [illegible]лизмдан аҡрынлап коммунизмға [illegible] бурыстары уңышлы хәл итела. [illegible] коммунистик төҙөлештең уңыштары [illegible] халыҡтарҙы социализм, демократия [illegible] азатлыҡ өсөн көрәшкә рухландыра.

Б. Ш[illegible]

Политик һәм фәнни белемдәр[illegible] [illegible]тыу буйынса Бөтә Союз [illegible]һының действительный член[illegible].

КОММУНИЗМ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕ—БӨТӘ ХАЛҠ ЭШЕ

Өфө электр оборудованиелары заводы коллективы коммунизмдең бөйөк төҙөлештәренә заказдарҙы уңышлы үтәй. Иптәш Охримович етәкселек иткән бригада көн һайын ике норма бирә.

Һүрәттә: (һулдан уңға) слесарҙар В. Попов һәм З. Сафин, бригадир В. Охримович һәм слесарь Н. Хәснияров иптәштәр әҙерләнгән продукцияны ҡарайҙар.

А. Черкинский фотоһы.

Заказдар срогынан алда үтәлә

Өфө электр оборудованиелары заводы 4 айлыҡ планды срогынан 11 көн алда үтәне. Ул май айында тағы ла яҡшыраҡ эшләй.

Планды срогынан алда үтәү өсөн көрәштә йәштәр ҙур роль уйнайҙар. Бигерәк тә 4-се номерлы стахановсы, отличный сифатлы механика-йыйыу цехының йәш производственниктәре рухланып эшләйҙәр. Бында 11 комсомолец-йәштәр бригадаһы бар. Уларҙың бөтәһе лә юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге өсөн көрәшә.

Цехтың механика участкаһында стенаға ҙур плакат эленгән. Ул бораулаусы Ивановтың коммунизмдең яңы төҙөлештәренең заказдарын бер ниндәй сифатһыҙ үтәү өсөн йөкләмә алыуы тураһында һөйләй. Участканың комсоргруппоргы бығаса тиклем булмаған күтәренкелек менән эшләй. Герман Иванов юғары тиҙлектәрҙә эшләп, күтәренке нормаларҙы систематик ике-өс тапҡырға арттырып үтәй. Яңы төҙөлештәрҙең заказдарын үтәүҙә фрезеровщик Хәмзә Ғафаров, полировщиктар Анатолий Петухов, Анатолий Золотников, комсомолец Солтан Кәримовтар стахановса эшләйҙәр. Йәш револьверщицалар Флюра Бикбулатова, Лида Фисюн һәм башҡалар эштә яҡшы күрһәткестәр бирәләр.

Комсомолец Владимир Охримович етәкселек иткән бригадаға 30 көн эсендә рубильникле приводтарҙың ҙур партияһын эшләү тураһында Волга гидроэлектростанцияларының ҙур һәм почетлы заданиеһе бирелде. Йәш бригадир заданиене үтәргә башлауҙан алда заказды срогынан элек үтәү өсөн эште нисек итеп яҡшыраҡ ойоштороу кәрәклеген тикшерҙе. Ул хеҙмәтте һәм эш урынын ойоштороуға етди иғтибар бирҙе. Үҙ фекере тураһында бригада членары менән уртаҡлашты. Йәштәр приводтарҙы йыйнауҙы конвейер менән ике алымда үткәрергә булдылар. Был заказ үтәүҙе өс тапҡырға тиҙләтергә мөмкинлек бирҙе. Улар коммунизмдең яңы төҙөлештәренә ярҙам итеү теләге менән рухланып, почетлы заказды бик ҡыҫҡа срокта үтәргә ҡарар иттеләр. Йәш стахановсылар үҙ һүҙҙәрендә торҙолар — задание 4 көн эсендә үтәлде. Хатта иң йәш слесарь-йыйнаусы Вениамин Попов та көндәлек эш нормаһын 170 процентҡа һәм унан да күберәккә үтәне.

Коммунизмдең яңы төҙөлештәренең заказдары йәштәрҙең мөһим эше булып өйрәлде. Сталинсе эпохаһының бөйөк төҙөлештәренең заказдарын үтәү срокын тиҙләтеү өсөн көрәшеп, улар эшләп сығарыу технологияһын камиллаштыралар, рационализаторлыҡ тәҡдимдәре индерәләр. Изделиеларға крепеждар ҡуйыу өсөн бәләкәй механизация киң ҡулланыла, 400—200 амперлы рубильниктәр өсөн элек ҡул менән яһалған пружиналарҙы эшләү механизациялаштырылған.

Механика цехының токаре комсомолец Григорий Вдовин аппарат командаһының червячный шестеренкаһын үткерләү технологияһын тамырынан үҙгәртте. Элек һәр бер шестеренканы вағ заготовкаларҙан айырым үткерләй инеләр. Былай эшләгәндә червяктәрҙең ҡырыйҙарын ҡырҡыуға бик күп ваҡыт китә ине. Вдовин червяктең ҡырыйҙарын бөтөн болванкала ҡырҡып, шунан һуң ғына вағ киҫәктәргә ҡырҡырға булды. Был станоктан деталь алыуҙы күп тапҡыр арттырырға, бракты кәметергә мөмкинлек бирҙе. Токарь Вдовин үҙенең тәжрибәһен бергә эшләгән иптәштәре менән уртаҡлаша һәм уларға юғары һәм тотороҡло етештереүсәнлеккә өлгәшеүҙә ярҙам итә.

Хәҙер заводтың цехтарында биш айлыҡ заданиене срогынан алда үтәү өсөн ҡыҙыу көрәш бара. Һәр бер яңы көн яңы производство уңыштары менән билдәләнә.

С. Мәүлютов.

Яңы китаптар

Ошо көндәрҙә башҡорт телендә күп кенә яңы китаптар баҫылып сығып, китап магазиндарында һатыла башланы.

И. Сталин. «Марксизм һәм милли мәсьәлә». Күләме 72 бит, тиражы 5.000 дана, хаҡы 1 һум. Еңел, аңлайышлы телдә тәржемә ителгән. Тәржемәсеһе Ә. Ҡотош. Яҡшы ҡағыҙҙа, матур итеп оформить ителгән.

Академик В. Р. Вильямс. «Игенселек нигеҙҙәре», В. Ғирфанов тәржемәһе. Күләме 227 бит, хаҡы 5 һум 70 тин, тиражы 4.000. Китапта В. Р. Вильямс учениеһендә ҡайһы бер хата положениелар тураһында Академик Т. Д. Лысенко иптәштең капиталь мәҡәләһе индерелгән. Китап игенселектә урожайҙы күтәреү тураһында тулы һәм киң кәңәштәр бирә. Колхоздар өсөн был китап бик ҙур әһәмиәткә эйә.

Республикабыҙ мәктәптәрендә

Мәктәп комсомол ойошмаһы—педагогик коллективтың терәге

ВЛКСМ-дың 1949 йылда булып үткән XI съезының көн тәртибендә мәктәп комсомол ойошмаларының эше һәм [illegible] мәсьәләһе ҡаралды. Съездың был мәсьәлә буйынса ҡабул иткән ҡарарында, мәктәп комсомол ойошмалары уҡыусыларҙы коммунистик рухта тәрбиәләү [illegible] педагогик коллективтың тоғро терәге булырға тейеш, тип күрһәтелә.

Ишембай ҡалаһының 3-сө номерлы башҡорт урта мәктәбе эргәһендәге комсомол ойошмаһы XI съезд ҡарарҙарын [illegible] тәр башҡара. Ағымдағы уҡыу йылының башында беҙҙең ойошмала 45 кеше комсомолец иҫәпләнһә, хәҙер уларҙың һаны 75-кә етте. Уларҙың иң күпселеге «дүрт» һәм «биш» билдәләренә генә уҡый.

Комсомол ойошмаһы бөтә эшен дирекция тарафынан раҫланған айлыҡ план буйынса алып бара. Комсомол йыйылыштарында [illegible]

[illegible]

тиклем күберәк ылыҡтырыу өлгәшеүҙе күтәреүҙә бик ҙур ярҙам бирә. Бындай түңәрәктәрҙең эшен комсомол ойошмаһы үҙенең контроле аҫтына алды һәм уларға өҙлекһеҙ ярҙам күрһәтә.

Мәктәптең йәш натуралистар түңәрәгенә 40 уҡыусы йөрөй. Был түңәрәкте [illegible] уҡытыусыһы иптәш Х. Хәкимйән етәкселек итә. Мәктәп эргәһендә һәм натуралистар баҡсаһы бар. [illegible] Беҙҙең мәктәп уҡыусыларының 12 кешеһе СССР һәм РСФСР Ауыл хужалығы министрлыҡтары тарафынан бүләкләнде.

Уҡытыусы иптәш С. Әбйәлилов етәкселек иткән физика-математика түңәрәге лә үҙенең эшен яҡшы ойоштора. [illegible]

[illegible]

ҡатнашалар. Тейешле әҙерлекле комсомолецтар уҡыусылар алдында доклад менән сығыш яһайҙар. Мәҫәлән, 9 класс уҡыусыһы комсомолец иптәш Назарғәлиев «Коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре», комсомолка иптәш Вәлиуллина «8 март — Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө», комсомолец иптәш Ғирфанов «Тыныслыҡ яҡлаусыларҙың II бөтә донъя конгресы», 10 класс уҡыусыһы комсомолец иптәш Түбәев «Кореялағы ваҡиғалар» тигән темаларға доклад яһанылар. Докладтарға әҙерләнеү уларҙан политик һәм фәнни китаптарҙы күберәк уҡыуҙы талап итә һәм уларҙың белемдәрен киңәйтә.

Комсомолецтарҙың һаны 3-тән артыҡ булған класстарҙың барыһында ла беҙ комсомол группалары ойоштортоҡ. Группалар класстарҙа өлгәшеүҙе күтәреү өсөн көрәштә ҙур урын тоталар. Миҫал өсөн 10 класты алырға мөмкин. Был класс уҡыусыларының бөтәһе лә комсомолецтар. Был комсомол группаһы үҙенең һәр бер йыйылышында уҡыуҙа артта ҡала башлаған комсомолецтарҙы тыңлай һәм йыйылыштың ҡарары нигеҙендә уларға төрлө сара күрә, ярҙам ойоштора. Һөҙөмтәлә класта өлгәшеү 92 процент тәшкил итә. Мәктәп буйынса өлгәшеү 3-сө сиректә, 1-се сирек менән сағыштырғанда, 15 процентҡа күтәрелде.

Хәҙер мәктәптә уҡыу йылының иң яуаплы осоро — экзамендар башланды. Беҙҙең уҡыусылар экзаменға март айынан уҡ әҙерләнә башланылар. Комсомол комитеты иң яҡшы уҡыусыларҙы артта ҡалыусыларға ярҙам итеү өсөн беркетте. Күп кенә комсомолецтар иптәштәренә үҙҙәре теләп ярҙам итәләр. Экзамендарға әҙерләнеү өсөн 3-сө сиректең аҙағынан уҡ 4 бүлмә бушатылды. Был бүлмәләрҙә экзамендарға әҙерләнеүселәргә ярҙам итеү маҡсатында беседалар үткәрелде. Экзаменға әҙерлек бүлмәләрен комсомолецтар уҡыу әсбаптары менән йыһазландырҙылар.

Беҙҙең комсомол ойошмаһы бер генә уҡыусыны ла икенсе йылға ҡалдырмау өсөн көрәштә уҡыусылар һәм уҡытыусылар коллективына быны шулай ярҙам итә.

В. Даутов,

Ишембай ҡалаһы 3-сө номерлы башҡорт урта мәктәбе комсомол ойошмаһының секретары.

Уҡытыу-тәрбиә эштәренең үҙәгендә

Өфө ҡалаһының 9-сы номерлы башҡорт урта мәктәбендәге комсомол ойошмаһы сафында 280 комсомолец иҫәпләнә. Был, бөтә уҡыусыларҙың яртыһынан күбеһен тәшкил итә тигән һүҙ. Комсомол ойошмаһы мәктәптең дирекцияһы һәм уҡытыусылары менән тығыҙ бәйләнештә эшләй, уҡыусылар араһында тәрбиә эшен яңы юғарылыҡҡа күтәреү, өлгәшмәүсәнлекте бөтөрөү өсөн көрәшә.

Бөтә комсомолецтар ҙа төрлө фәндәр буйынса ойошторолған түңәрәктәрҙә ҡатнашалар.

Комсомол ойошмаһының инициативаһы менән уҡыусылар өсөн докладтар һәм лекциялар уҡыла. Һуңғы ваҡытта юлбашсыларыбыҙ Ленин һәм Сталиндең тормош һәм хеҙмәт юлы, коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре, Ленин комсомолы тураһында һәм фән өлкәһендәге төрлө темаларға лекциялар уҡылды. Башҡорт шағиры Рәшит Ниғмәти, бөйөк рус шағирҙары А. С. Пушкин һәм М. Ю. Лермонтов ижадтарына арналған кисәләр үткәрелде.

Йәштәрҙе тәрбиәләү эшендә уҡыусылар конференцияһы үткәреү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Комсомол ойошмаһы уҡыусылар менән Б. Полевойҙың «Ысын кеше тураһында повесть», Ә. Бикчәнтәйҙең «Үлемһеҙлеккә хоҡуҡ» тигән әҫәрҙәре һәм башҡа китаптар буйынса конференциялар уҙғарҙы.

Быйылғы уҡыу йылында мәктәптең үҙендә радиоузел эшләй. Радио аша беседалар, докладтар, концерттар, алдынғы комсомол ойошмаларының эш тәжрибәләре һәм төрлө яңылыҡтар тапшырыла.

Комсомол йыйылыштарында һәм комсомол комитеты ултырыштарында уҡыусыларҙың өлгәшеүе тураһындағы мәсьәлә көн тәртибенән үҙәгендә тора. Унда артта ҡалыусы уҡыусыларға ярҙам, өлгәшмәүсәнлекте бөтөрөү өсөн көрәш саралары ҡарала.

Комсомол комитеты көн һайын радио аша мәктәп буйынса көндәлек өлгәшеү йомғаҡтары менән уҡыусыларҙы таныштырып тора.

Өлгәшеүҙе күтәреү өсөн көрәштә мәктәптең һәм класстарҙың стена газеталары ла мөһим урын тоталар.

Ошондай саралар үткәреү һәм өлгәшеү процентын күтәреү өсөн өҙлекһеҙ көрәш алып барыу һөҙөмтәһендә быйыл, былтырғыға ҡарағанда, өлгәшеү проценте байтаҡ үҫтә. Баһаветдинова, Мәсәғутов, Ҡинйәғолов, Мәүлитбирҙин, Ғәҙелшин, Ғилметдинов, Иҫәнтәев, Буранаев һәм башҡа комсомолецтар отлично һәм яҡшы билдәләренә генә уҡыйҙар.

Комсомол ойошмаһы яҙғы экзамендарға тулы әҙерлек менән килеү өсөн комсомолецтар һәм уҡыусылар араһында эште тағы ла киңерәк йәйелдерҙе.

Х. Хангилдина,

ВЛКСМ-дың Өфө ҡалаһы Ленин район комитеты мәктәп һәм пионерҙар бүлеге мөдире.

Дүртөйлөләр өлгөһөндә

Мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына алдан әҙерләү тураһында дүртөйлөләрҙең патриотик саҡырыуына ҡушылып, Ғафури районының күпселек мәктәптәре 1951 — 1952 уҡыу йылына әҙерлек эшен киң йәйелдерҙеләр.

Ташлы ауыл Советында уҡыусыларҙың ата-әсәләре воскресник ойоштороп, эте йыллыҡ мәктәп бинаһына капиталь ремонт үткәрергә етерлек бүрәнә һәм яғыу сезонына етерлек утын әҙерләнеләр. Красноусол леспромхозы мәктәпте шефлыҡҡа алды һәм төҙәлеш материалдарын урмандан мәктәп ергәһенә сығара башланы.

Мәктәптәргә утын әҙерләү буйынса воскресниктар «Ҡыҙыл партизан» промартелендә, «Беренсе Юрмаш» колхозында ла уҙғарылды һәм бындағы мәктәптәр утын менән тулыһынса тәьмин ителделәр.

С. Усманов.

БӨЙӨК МАТЕМАТИК ҺӘМ МЕХАНИК П. Л. ЧЕБЫШЕВ

Бөйөк рус ғалиме математик һәм механик П. Л. Чебышевтың тыуыуына бөгөн 130 йыл тулды.

Академик П. Чебышев бик мөһим күп кенә асыштар яһаны һәм уның идеяларынан яңы бүлектәр барлыҡҡа килде, был бүлектәр өҫтөндә хәҙерге осорҙоң бик күп математиктәре эшләй. Ул һандар теорияһында махсус метод тыуҙырҙы, дөрөҫлөктә тикшереү теорияһында ҙур һандар законын ҡулланыу сфераһын байтаҡ киңәйтте, алгебра дифференциалдарын интегрировать итеү мәсьәләләрендә һәм география карталарын мөмкин тиклем ҡулайлы итеп төҙөү өлкәһендә оҙаҡ йылдар һәм уңышлы эшләне. П. Л. Чебышев әйләнгес хәрәкәт принцибы буйынса эшләүсе күп кенә механизмдарҙың моделдәрен эшләне.

Бөйөк рус ғалиме П. Чебышев практиканан сығып математиканың мөһим проблемаларын төҙөнө һәм хәл итте.

Һүрәттә: ғалим П. Л. Чебышев.

(ТАСС фотохроникаһы).

Алдынғы комбинат

Беренсе кварталдың социалистик ярышында Бәләбәй ит комбинаты республикала беренселекте алды һәм уға ит-һөтсәлек промышленносы работниктары профсоюзы өлкә комитетенең күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

Был уңыш менән рухланған комбинат коллективы тағы ла яҡшыраҡ һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн көрәшә. Бында апрель айы планы 242 процентҡа үтәлде. Шулай уҡ май айы заданиеһе лә уңышлы үтәлә. Комбинат стахановсылары Гурин, Суханова, Бочаров, Исмәғилов, Миңнеәхмәтов һәм башҡа иптәштәр үҙҙәренең көндәлек эш нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр.

К. Абдуллин.

Емеш ағастары үҫтерәләр

Дыуан ауыл хужалығы техникумы студенттары үҙҙәренә беркетелгән тәжрибә участкаһында үткән йыл 0.15 гектар ҡара ҡарағат, 0.75 гектар ҡурай еләге, 2 мең төп акация, 400 төп алма ағасы ултыртҡайнылар.

Ултыртылған ағастарҙы яҡшылап тәрбиәләү—рәт араларын йомшартыу, ҡороған ботаҡтарын ҡырҡып ташлау һөҙөмтәһендә ағастар йәшәреп, матур булып үҫеп киттеләр. Быйыл ҡарағат һәм ҡурай еләктәренән тәүге урожай йыйнап алыу көтөлә. Студенттар тағы ла 3 мең төп крыжовник, 5 мең төп ҡара ҡарағат, 100 төп «китайка» сортлы алма ағасы ултырттылар.

Р. Сафин

Тәбиғәтте үҙҙәренә буйһондороусылар

Көн аяҙ. Күк зәңгәр. Тәбиғәттең матурлығы, яҙҙың ҡояшлы көндәре һәм быйыл яҙҙың яҡшы килеүе артель членарын яңы хеҙмәт подвигтарына рухландыра. Колхозсылар юғары урожай үҫтереү теләге менән тулылар. Һәр кемдең йөрәгендә, уйында, фекерендә яҙғы баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта, агротехника ҡағиҙәләренә ярашлы итеп үткәреү тойғоһо йәшәй.

Ул шулай булырға тейеш тә. Колхозсылар быны бик яҡшы аңлайҙар. Сөнки юғары урожай үҫтереү — социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан нығытыу, колхозсыларҙы культуралы, мул тормошло итеүҙә төп нигеҙ булып тора.

Яҙғы баҫыу эштәре быйыл, элеккеләргә ҡарағанда, иртәрәк башланды. Колхозсылар ер ҡарҙан асылыу менән уҡ ҡар һыуҙарын тота башланылар. Баҫыуҙарҙа тупраҡ дымлы.

Бына Тамьян баҫыуы. Уның йәнәшәһендә күп һыулы, тәмле балыҡлы Өсән йылғаһы аға. Ошо йылға буйында 409 гектар майҙанда ужым баҫыуы. Ул, йәшел ҡыяҡ кеүек, тигеҙ булып үҫеп ултыра, мул урожай вәғәҙә итә. Колхозсылар, Мичурин өйрәткәнсә, тәбиғәттән мәрхәмәт көтөп тормайҙар, совет агрономияһы ҡушыуы буйынса ерҙе юғары сифатлы итеп эшкәртәләр һәм тәбиғәтте үҙҙәренә буйһондоралар. Үткән йылда улар арышты ерҙе яҙ итеп ике ҡат һөрөлгән, тырмаланған, культиваторланған ергә беренсе икенсе класстарҙа сәсеп ҡалдырғандар. Быйыл яҙ бөтә ужым баҫыуҙары тырматылған, ә 78 гектар майҙандағы орлоҡ участкаһына көл һибелгән, ул өҫтәмә аҙыҡландырылған, тырматылған.

— Дөйөм арыш майҙанының гектарынан ун бишәр центнер, ә орлоҡ участкаһынан 18-әр центнер урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ, — ти колхоз председателе иптәш Асылгәрәев.

Председатель һүҙҙәренең реаль булыуын киң баҫыуҙағы матур булып үҫеп ултырған йәм-йәшел арыш ужымы тағы бер тапҡыр дөрөҫләй.

«Трактор» ауыл хужалығы артеле — ул үлән сәсеү буйынса махсус орлоксолоҡ хужалығы. Бында ун баҫыулы сәсеү әйләнеше индерелгән. Артель членары люцерна, костер һәм житняк кеүек күп йыллыҡ үләндәр үҫтерәләр. Үләндең хужалыҡ өсөн ҙур файҙа килтереүен колхозсылар яҡшы беләләр. Мәҫәлән, әгәр ҙә колхоз бер центнер үлән орлоғон государствоға тапшырһа, бының өсөн 826 һум аҡса ала, шуның өҫтөнә ике центнер бойҙай, 15 центнер бесән тапшырылған итеп иҫәпләнә. Костер үләне орлоҡтары ла бик ҡиммәтле.

Артель членары күп йыллыҡ люцерна үләнен үҫтереүгә айырыуса иғтибар итәләр. Былтыр сәселгән ун гектар люцерна баҫыуына быйыл яҙ өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелгән: һәр бер гектарға икешәр центнер суперфосфат һибеп сығылған һәм шунан артынан тырматылған. Люцернаның сығышы яҡшы, киләсәге өмөтлө. Быйыл люцерна сәсеү планы 80 гектар булһа, ул срогынан алда 10 гектарға арттырып үтәлде.

Күп йыллыҡ костер үләне 27 гектар тәшкил итә. Шуның 17 гектары бынан өс йыл элек, ә ун гектары былтыр сәселгән. Былар бөтәһе лә быйыл уҡ орлоҡ бирәсәктәр. Шуның өҫтөнә быйыл костер үләне сәсеү планы 31 гектар булһа, артель членары уны 50 гектар итеп үтәгәндәр. Бында ла агротехника ҡағиҙәләре нығыҡ һаҡланған.

Иң ҡиммәтле культураларҙан һаналған бойҙай культураһы быйыл 580 гектар майҙанда сәселде. Уны эшкәртелеүе, сәсеү сроктары совет агротехникаһы талаптарына тулы яуап бирә. Колхозсылар иртә культуралар сәсеүҙе, ярыш договорында ҡаралғанынса, 7 эш көнөндә тамамланылар. Яҡшы сифатлы итеп 230 гектар һоло, 55 гектар көнбағыш һәм борсаҡ, мәк культуралары сәселде.

Был ҙур еңеүгә өлгәшеүҙең сере нәмәлә һуң? Бөтәһенән элек, колхоздың эреләтелеүендә, тракторҙар паркын тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн киң мөмкинлектәрҙең тыуҙырылыуында, механизаторҙарҙың баҫыусылыҡ бригадалары менән берҙәм дуҫлыҡта эшләүҙәрендә һәм һәр бер сәғәтте, минутты эштә тулы файҙаланыуҙа.

Кадрҙар бөтәһен дә хәл итәләр, тип өйрәтә иптәш Сталин. Эреләтелгән колхоздың председателе итеп ҙур тәжрибәле, халыҡ менән эш итә белә торған, ауыл хужалығы эштәренең бөтә нескәлектәрен өйрәнгән коммунист иптәш Шәрифьян Асылгәрәев һайланған. Ул партия ойошмаһы менән берлектә яуаплы постарға иң эшлекле кешеләрҙе ҡуйған. Колхоз председателенең урынбаҫары булып тәжрибәле коммунист иптәш Ғ. Солтанов эшләй. Колхоздағы элекке 7 бригада урынына хәҙер өс баҫыусылыҡ бригадаһы ҡалдырылған. Бригадалар менән эшлекле, хеҙмәт һөйөүсән Фәрхи Сәйфов, Ғәйнетдин Шәйхетдинов һәм Ҡәшфел Әминев иптәштәр етәкселек итәләр.

Колхоз председателе иптәш Асылгәрәев яҙғы сәсеү осоронда көнөн дә, төнөн дә баҫыуҙа — колхозсылар, тракторсылар янында булды. Баҫыусылыҡ бригадалары менән трактор бригадаһы араһында тығыҙ бәйләнеш, хеҙмәттәшлек ойошторҙо. Партия ойошмаһы (секретары иптәш Зәйтүнә Һадиева) коммунистарҙан конкрет һәм оператив эш талап итте. Коммунистар юғары урожай өсөн көрәштең алдынғы сафында булдылар. Комсомол комитеты секретары иптәш М. Тимербаев ойошмалағы 17 комсомолецты стахановсы эшкә ойошторҙо.

Айырым эш участкаһына беркетелгән коммунистар, комсомолецтар, партияһыҙ актив эште намыҫ менән башҡарҙылар һәм үҙҙәре артынан массаны эйәрттеләр. Бирелгән вәғәҙә, әйткән һүҙ, алынған социалистик йөкләмәләр үҙ ваҡытында, юғары сифатлы итеп үтәлде.

Кладовщик иптәш Н. Ситдиков сәсеү орлоғон тәүлек әйләнәһенә оҙатып торҙо. Орлоҡто өс ат менән ташыу ойошторолдо. Баҫыуға орлоҡ ташыусылар Ялалетдин Нурғәлиев, комсомолецтар Ғәли Хисаев, Тимерьян Хәсәнов иптәштәр, сменаға 8-9 рейс яһап, норманы арттырып үтәүгә өлгәштеләр. Әүхәди Хәкимов, Сафа Садиҡов, Талбы Хәкимов иптәштәр тракторҙы туҡтатмайынса сәскес машинаһына орлоҡ һалып тороуҙы тәьмин иттеләр. Сәскес машинаһында эшләүсе Миңнеәхмәт Гәрәев, Ҡәшфулла Зарипов, Зәйнулла Ғәйфуллин, Талип Ғәлиев иптәштәр, 60-75 йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, йәштәр кеүек эшләйҙәр, үҙҙәренең бай эш тәжрибәләрен юғары урожай үҫтереүгә файҙаланалар.

Социалистик ярышта иптәш Шәйхетдиновтың баҫыусылыҡ бригадаһы алдынғы булып сыҡты. Ярыш байрағы уның бригадаһында елберҙәй. Агротехник иптәш Фәррәхов яҙғы сәсеү эштәренең сифатын һәр ваҡыт тикшереп тора. Сәсеү барыһы тик теҙмә сәскес менән генә башҡарылған. Ерҙе бөҙөп эшкәртеү кеүек күренештәргә юл ҡуйылманы.

«Трактор» колхозын Ҡарамалы Ғөбәй МТС-ы хеҙмәтләндерә. Бында алты трактор эшләй. Бригадиры—коммунист иптәш Х. Исламов. Бригаданың эше тураһында ул былай ти:

— Беҙҙең бригада Чапаев исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш С. Шаһиев бригадаһы менән ярыша. Беҙ алдынғы сафта булыу өсөн бөтә көс менән эшләйбеҙ. Минең бригада Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Бунеев бригадаһы өлгөһөндә сәғәт графигы буйынса эшләй. Тракторсылар ун берәр сәғәтләп ике сменала эшләйҙәр. Социалистик ярыш йөкләмәһе теүәл үтәлеп килә. Мәҫәлән, тунға һөрөлгән ерҙе яҙ көнө иртә тырматыуҙы 3 көндә тамамларға алынған йөкләмә ике көн ярымда үтәлде. Планда ҡаралған 800 гектар урынына 918 гектар ер тырматылды. Иртә культуралар сәсеү 6-7 көндә юғары сифатлы итеп башҡарылды.

Яҙғы сәсеүҙә тракторист иптәш С. Нәсибуллин, уның сменщигы иптәш И. Заһидуллин С—80 тракторы менән тәүлек әйләнәһенә сәстеләр. Бер тракторға дүртәр сәскес тағылып, улар көнөн дә, төнөн дә үлән һәм иген сәстеләр. Норма артығы менән үтәлеп килде. Тракторсылар Ф. Ғәниев, Ә. Батталов, М. Надыршин иптәштәр социалистик ярышта алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәп киләләр.

Трактор бригадаһы менән баҫыусылыҡ бригадаһы араһында хеҙмәттәшлек итеү, сәғәт графигы менән эшләү, колхозсы крәҫтиәндәрҙең ҙур ойошҡанлыҡ менән хеҙмәт итеүҙәре еңеүҙе тәьмин итте.

Ләкин «Трактор» ауыл хужалығы артеле членары өлгәшелгәндәр менән генә тынысланырға яратмайҙар. Улар яҙғы баҫыу эштәрен әлгелә үткәреү менән бергә, киләһе йыл урожайы тураһында ла хәстәрлек күрәләр. Иртә пар һөрөү эштәре тамамланыу алдында. Бер үк ваҡытта сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, бесән сабыуға, урожай йыйнауға әҙерлек эштәре лә киңәйтелде.

«Трактор» колхозы членары быйыл тотош майҙандарҙан юғары урожай алыу өсөн бына шулай көрәшәләр.

Ғ. Үлмәсов.

Ҡандра районы «Трактор» колхозы.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

Яңы культураларҙы тәрбиәләү

Һуңғы йылдарҙа беҙҙең Башҡортостан баҫыуҙарында, халыҡ хужалығы өсөн ҙур әһәмиәтле яңы культуралар үҫтерелә башланы. Улар иҫәбенә чумиза, крамбе, кукуруза, май мәге, рыжик, күк һағыҙ үҫемлектәр инәләр. Был культураларҙың үҫеп етешеүҙәре һәм урожай биреүҙәре тигеҙ түгел әле. Шуның өсөн яңы культураны агрономия фәне ҡушҡан шарттарҙы тулы һәм үҙ ваҡытында ҡулланып үҫтерергә кәрәк. Күп кенә яңы культураларҙың агротехник юлдары беҙҙең Башҡортостан колхоздарында өйрәнелеп етмәгән әле.

Юғарыла әйтелгән культуралар араһында **чумиза** Башҡортостанда яңы ғына тарала башлаған ашлыҡ булып тора. Уның бөртөгө яҡшы сифатлы ярма бирә. Ярылмаған бөртөгө йорт ҡоштары өсөн иң туҡлыҡлы аҙыҡ булып иҫәпләнә. Ҡоролоҡҡа сыҙамлылығы яғынан ул беренсе урынды тота һәм юғары урожай бирә. Агротехник шарттарҙы тулы һәм дөрөҫ ҡулланғанда, был культураның һәр гектарынан алынған урожайы 50 центнерға тиклем етә.

Чумиза сәсеүлегенең тәрбиә эштәре, бигерәк тә уны ҡый үләненән таҙартыуға ҡаратылған булырға тейеш. Быныңөсөн шытып сығыу менән, уның теҙмә рәт араларын йомшартырға һәм ҡый үләндәренән утарға кәрәк. Был эш үҫемлектәр ныҡып ҡалҡҡанға тиклем тағы ла 2 тапҡыр ҡабатлана.

Чумиза минераль һәм башҡа төрлө ашламаларға бик һиҙгер культура. Ғәҙәттә, уның өсөн серегән тиреҫ, минераль ашламаларҙан суперфосфат һәм калий тоҙо ҡулланыла. Был тоҙҙар өҫтәмә аҙыҡландырыу рәүешендә бирелә. Өҫтәмә аҙыҡландырыу үҫемлектәр ҡыуаҡланып ныҡығас та теҙмәләр араһына ҡул менән һибеп индерелә.

Чумизаны, уның башағындағы бөртөктәренең төп өлөшө бешкәнгә тиклем, йыйнай башларға кәрәк. Был культураны урыр өсөн комбайн йәки башҡа ябай урыу машиналары ла ҡулланыла.

Абиссиния крамбеһе — Башҡортостанда һуңғы 4—5 йыл эсендә генә тарала башлаған майлы культура. Был культураның халыҡ хужалығында булған әһәмиәте, биологик үҙенсәлектәре һәм уның сәсеү агротехникаһы тураһында «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 9 майҙа сыҡҡан номерендә яҙылғайны инде. Бында шуны ғына әйтергә мөмкин: крамбене үҙ ваҡытында яҡшылап тәрбиәләү — юғары урожай үҫтереүҙә хәл иткес шарттарҙың береһе. Шуның өсөн крамбе шытып үҫә башлағас та, рәт араларын ҡул мотығаһы йәки ат пропашниктары менән йомшартырға кәрәк. Рәт араларын икенсе тапҡыр эшкәртеү үҫемлектәр тармаҡлана башлағас, ә өсөнсө эшкәртеү сәскә атыу алдынан үткәрелә. Крамбене өҫтәмә аҙыҡландырыу икенсе йәки өсөнсө эшкәртеү алдынан индерелә. Был маҡсатта тиреҫ шыйыҡсаһы, көл һәм ҡош тиҙәге, ә минераль ашламаларҙан — суперфосфат һәм калий тоҙо ҡулланыла.

Кукуруза яҡшы тәрбиәләгәндә юғары урожай бирә. Ул үҙенең биологик үҙенсәлеге буйынса дымға бай, тәрән һөрөлгән йомшаҡ ергә ярата. Ул, шытып сығып, 2 — 3 япраҡ күрһәткәс тә, еңел тырма менән сәсеүлек тырматыла. Был сара ҡый үләндәрен бөтөрә һәм тупраҡ өҫтөндәге ҡаты ҡатламды йомшарта. Үҫемлектәр, 4 — 5 япраҡ күрһәтеп, 10 — 12 сантиметр буйға еткәс тә, араларын 20 — 25 сантиметр ҡалдырып һирәгәйтергә кәрәк. Был уңайҙа теҙмәләрҙә үҫкән ҡый үләндәре утала, теҙмә аралары йомшартыла. Теҙмә араларын йомшартыу һәм утау, ҡый үләндәренең сығыуҙарына ҡарап, 2 — 3 тапҡыр уҙғарыла.

Кукуруза өҫтәмә аҙыҡландырыуға бик һиҙгер. Шуның өсөн уны сәскә атыу алдынан минераль йәки урындағы ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырырға кәрәк. Быныңөсөн биш өлөш һыуға ҡушылған тиреҫ шыйыҡсаһы рәт араларына һибелә, тупраҡ менән күмдерелә. Минераль ашламаларҙан тиҙ иреп торған суперфосфат, калий тоҙо һәм аммоний сульфаты ҡулланыла. Улар ямғыр алдынан теҙмә араларына һибелә.

Май мәге—иртә сәселә торған культура. Уны киң рәтле теҙмә ысул менән, гектарға 4 — 5 килограмм норма менән сәсәләр. Был культура тәүге ваҡытта бик аҡрын үҫә, ҡый үләндәре менән томалана. Был хәлдә булдырмаҫ өсөн мәк шытып, теҙмәләр беленгәс тә, уны ҡый үләндәренән утарға һәм теҙмә араларын йомшартырға кәрәк. Был эш, мәк ныҡып үҫеп, теҙмә рәт араларын ҡаплай башлағанға тиклем бер нисә тапҡыр үткәрелә.

Мәк тупраҡта туҡлыҡлы матдәләрҙең күп булыуын ярата. Шуның өсөн өҫтәмә аҙыҡландырыу талап ителә. Ул бигерәк тә фосфорлы ашламаларға мохтаж. Өҫтәмә аҙыҡландырыу эше кукурузаны аҙыҡландырыу кеүек үк үткәрелә.

Рыжик — беҙҙең Башҡортостанда иртә сәселә торған бик әһәмиәтле май культураһы. Был культураны тотош теҙмә ысул менән сәсәләр. Шуның өсөн теҙмә араларын эшкәртеү уҙғарылмай. Шуға ҡарамаҫтан, был культураны ҡый үләндәренән таҙа тоторға кәрәк. Ул 1 — 2 тапҡыр утала. Рыжик фосфор ашламаһын күп талап итә. Шуға күрә фосфор ашламаһы менән өҫтәмә аҙыҡландырырға кәрәк. Рыжик урожайын һуңға ҡалдырмай урыу талап ителә.

Күк һағыҙ беҙҙең республикабыҙҙа, бигерәк тә Бөрө, Благовещен, Борай райондарында үҫтерелә. Был культураның тамыр урожайы дөрөҫ һәм үҙ ваҡытында тәрбиәләүгә бәйләнгән. Күк һағыҙ плантацияһын һәр ваҡыт ҡый үләндәренән таҙа һәм тупрағын йомшаҡ хәлдә тоторға кәрәк. Уның өсөн күк һағыҙ плантацияһы яҙ көнө аркырыға тырматыла һәм рәт аралары культиваторҙар йәки ат пропашниктары менән йомшартыла. Күк һағыҙ сәсеүлеген салмабаш (одуванчик) үләненән таҙартыу иң беренсе урынды тота. Быныңөсөн күк һағыҙ үҫемлеген салмабаш үләненән айыра белергә кәрәк. Күк һағыҙҙың япраҡтары шыма, ҡалын һәм күгелйем төҫтәрәк була. Салмабаш япрағы юҡа, йәм-йәшел, сәскә һабағы йыуан, һәм сәскә кәрзинкаһе эрерәк була.

Күк һағыҙ сәсеүлеген мульчировать итеү йәғни рәт араларын ҡаплау мөһим сараларҙың береһе. Быныңөсөн ваҡ торф йәки серегән тиреҫ ҡулланыла. Улар рәт араларына ергә йомшартыу һәм утау артынан һалына. Быныңәһәмиәте бик ҙур. Уның арҡаһында тупраҡ дымды юғалтмай һәм ҡый үләндәре томаланып, үҫмәй ҡалалар.

Яңы культуралар өсөн Башҡортостандың һауа шарты уңайлы. Уларҙан юғары урожай алыу өсөн беҙ был культураларҙы үҙ ваҡытында тәрбиәләргә тейешбеҙ.

Ғ. Ашрумов,
биология фәндәре кандидаты.

„НЕФТЯНИК" СПОРТ ОБЩЕСТВОҺЫНЫҢ БОКС БУЙЫНСА БӨТӘ СОЮЗ ЯРЫШЫ

«Нефтяник» ирекле спорт обществоһы Үҙәк Советы 1951 йылда бокс буйынса алдынғылыҡ өсөн Грозный ҡалаһында ярыш үткәрҙе.

Ярышта Мәскәү, Баку, Өфө, Грозный, Куйбышев һәм Гурьев ҡалаларының командалары ҡатнашты.

Командалар араһындағы ярышта Грозный ҡалаһы боксерҙар командаһы беренсе урынды, Баку ҡалаһы боксерҙар командаһы икенсе урынды, Краснодар ҡалаһы боксерҙар командаһы өсөнсө урынды алды. Команда беренселегенән тыш боксерҙар араһында алдынғылыҡ өсөн ярышта Грозный ҡалаһы боксерҙары Бухоновский, Воропаев, Иванов һәм Басов иптәштәр еңеүсе булып сыҡтылар. Был ярышта Өфө ҡалаһының ете спортсмены ҡатнашты. Боксер Р. Х. Гилмиев, икенсе разряд менән ҡатнашып, Союз буйынса икенсе урынды алды һәм беренсе разряд нормаһын тапшырҙы. Хәҙерге көндә Р. Гилмиев Өфө ҡалаһының чемпионы булып тора. Өфө боксеры А. Сайдашов, Союз буйынса өсөнсө урынды алып, беренсе разряд нормаһын тапшырҙы.

Маҡтау участкаһында

Кушнаренко районы Талбазы урта мәктәбе өсөнсөләре участкала иң тәүге һөнәр эшен алып бара. Бында 0,4 гектар майҙанда тәжрибә өсөн кишер, сөгөндөр, фасоль, картоф, һоло һәм башҡа культуралар сәселде.

Үткән йылда мәктәп баҡсаһында 400 төп алма, ҡурай еләге, ҡрыжовник, ҡарағат утыртылғайны. Хәҙер улар яҡшы үҫә. Уҡыусылар ағастар араһын таҙартып һәм йомшартып сыҡтылар. Шулай уҡ мәктәп эргәһендә 3 мең төп акация һәм ҡарағат ағастары утырттылар.

Ф. Имаметдинов.

Ҡыҫҡа хәбәрҙәр

Борай районы связь бүлеге «почта эштәрен өйрәнеү» түңәрәге ойошторҙо. Түңәрәккә иптәш Г. Миңнуллин етәкселек итә һәм унда связь работниктарының бөтәһе лә ҡатнаша. Дәрестәр яҡшы әҙерлек менән алып барыла.

Ғ. Мөхәмәтов.

* * *

Нуриман. Күптән түгел Башҡортостан совет яҙыусыларынан бер төркөм Павловка ГЭС төҙөлөшө поселкаһында булды. Улар поселка клубында әҙәби кисә үткәрҙеләр. Кисәлә яҙыусыларҙан Р. Ниғмәти, Ғ. Гүмәр, К. Кәрим, Ә. Бикчәнтәев, З. Биишева, А. Рыбин, О. Иҫхан, И. Куликов иптәштәр үҙ шиғырҙарын, хикәйәләрен уҡынылар.

Поселка эшселәре, инженер-техник работниктары яҙыусыларҙың сығыштарын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланылар.

Ғ. Ямаев.

* * *

Красноусол бальнеологик курорты быйылғы сезонды ҙур әҙерлек менән ҡаршыланы. Грязелечебница капиталь ремонт үткәрелде, ял итеүселәр өсөн торлаҡтар йыһазландырылды.

Ошо йылдың 15 майында курорт асыла башланы. Был йылғы сезондың тәүге нәүбәтендә 100 кеше дауаланасаҡ.

С. Усманов.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 24 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). 24 майҙа СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары үҙҙәренең 61-се ултырышына йыйналдылар. АҠШ вәкиле Джессеп председателлек итте.

Билдәле булыуынса, СССР вәкиле Громыко 22 майҙа булған ултырыштағы үҙенең сығышында көн тәртибенә Атлантик пакт тураһындағы һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне хатта килешелмәгән пункт сифатында индереүгә ҡарата ныҡлы ҡаршылыҡ күрһәткән өс көнбайыш державалар делегациялары позицияһының бөтөнләй нигеҙһеҙ икәнлеген күрһәткәйне.

Үҙҙәренең йомшаҡ позицияларын ныҡытыу өсөн ҡулланған бөтә «һылтаныуҙары» бөткәндән һуң өс көнбайыш держава вәкилдәре, гәрсә улар әле күптән түгел генә мәсьәләләрҙе индереү тәртибе тураһында көн тәртибенең килешелгән, шулай уҡ килешелмәгән бөтә пункттары тамам билдәләнгәндән һуң ғына тикшерелергә тейеш, тигән тәртип менән килешкән булһалар ҙа, бөгөн дискуссияны көн тәртибенең ҡалған пункттарының сиратлашыуы тураһындағы мәсьәләне тикшереү яғына күсерергә маташтылар.

СССР вәкиле Громыко көнбайыш держава вәкилдәренең Атлантик пакт тураһындағы һәм Англияла, Норвегияла, Исландияла, шулай уҡ Европаның һәм Яҡын Көнсығыштың башҡа илдәрендә Америка хәрби базаларын төҙөү тураһындағы килешелмәгән пунктты министрҙәргә тапшырыу хаҡындағы мәсьәләне тикшереүҙән ситкә китеү буйынса был маташыуҙарын кире ҡаҡты.

Француз вәкиле Пародиҙең, Атлантик пакт тураһындағы мәсьәлә буйынса өс держава делегацияһы тарафынан һәнәһе «инде бөтәһе лә әйтелде», тигән белдереүенән һуң, Джессеп ултырышты ябырға тәҡдим итте.

ТЫНЫСЛЫҠ ПАКТЫ ӨСӨН

Англияла ҡултамғалар йыйнау

ЛОНДОН, 24 май. (ТАСС). «Дейли уоркер» газетаһы, горняктарҙың милли профсоюзының Ормистондағы (Шотландия) урындағы бүлегенең бөтә исполкомы биш бөйөк держава араһында Тынычлыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә ҡул ҡуйған, тип хәбәр итә. Бүлек был Мөрәжәғәтте яҡлап конференция ойоштора.

Эдинбургта Мөрәжәғәткә беренсе мең ҡултамғаһы йыйналған һәм аҙна аҙағына 3 мең ҡултамғаһы йыйналасаҡ, тип көтәләр.

Тыныслыҡты яҡлаусыларҙың милли конференцияһына делегаттар ебәрергә теләү тураһында төрлө ойошмаларҙан хәбәрҙәр килә. Был конференцияны тыныслыҡты яҡлауҙың Англия комитеты 9—10 июндә саҡыра.

Японияла тыныслыҡ өсөн хәрәкәт

ШАНХАЙ, 24 май. (ТАСС). Японияның «Секай хейва» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Киотос университетенең студенттәре самоуправлениеһенең урындағы органдарына һайлауҙар буйынса күптән түгел булып үткән һайлау кампанияһы барышында биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә 1.500 ҡултамғаһы йыйнағандар. Иокосука ҡалаһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә, шулай уҡ бөтә яҡлы тыныслыҡ договорын төҙөү тураһындағы һәм Японияны ҡоралландырыуға ҡаршы талапҡа 3 мең ҡултамғаһы йыйналған.

Бөтә яҡлы тыныслыҡ договорын төҙөү тураһындағы талапҡа ҡултамғалары йыйнау уңышлы дауам итә.

Ренго Цусин агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, бөтә яҡлы тыныслыҡ договорын төҙөү тураһындағы талапҡа Аомори префектураһында 10 майға 27.388 ҡултамғаһы йыйналған. Уҡытыусыларҙың бөтә Япония союзының Ямагата префектураһындағы бүлеге был талапҡа 12 майға 5.620 ҡултамғаһы йыйнаған.

«Кова Симбун» газетаһы, Дзенсинзаҙың прогрессив театр труппаһы илдә гастролдә йөрөгән ваҡытта бөтә яҡлы тыныслыҡ договорын төҙөү тураһындағы талапҡа 17 мең ҡултамғаһы йыйнаған, тип хәбәр итә. Сотай ҡалаһында 73 йәшлек ҡатын Мацумото 3.600 ҡултамғаһы йыйнаған.

Тыныслыҡ өсөн көрәштә Франция хеҙмәтсәндәре

ПАРИЖ, 24 май. (ТАСС). «Юманите» газетаһы, Шер департаментенең тыныслыҡ советының ҡарарына ярашлы рәүештә ошо департаменттең 2 мең делегаты Парижда 15 июлдә үткәреләсәк тыныслыҡ слетында ҡатнашасаҡ, тип хәбәр итә. Улар биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү тураһында Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Шер департаментенең 200 мең кешеһе ҡул ҡуйған бюллетендәрен үҙҙәре менән килтерәсәктәр.

Иранда тыныслыҡ өсөн хәрәкәт

ТЕГЕРАН, 24 май. (ТАСС). Тыныслыҡтың Бөтә Донъя Советы Мөрәжәғәтенә Иранда 23 майға 800 мең кеше ҡул ҡуйған. Ҡултамғаларының 500 меңе Тегеранда, 100 меңе Исфаганда, 25 меңе Тавриздә, 25 меңе Баболдә йыйналған.

Ҡултамғалары йыйнау ваҡытында массовый митингылар үткәрелә. Һуңғы көндәрҙә тыныслыҡ яҡлаусыларҙың митингылары 20 мең кеше ҡатнашлығында Ширазда, шулай уҡ 20 мең кеше ҡатнашлығында Баболдә, 10 мең кеше ҡатнашлығында Хамаданда һәм башҡа күп кенә ҡалаларҙа булып үткән.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһының белдереүе

ПХЕНЬЯН, 24 май. (ТАСС). [Корея] халыҡ-демократик республикаһының [Халыҡ] армияһы баш командованиеһы бөгөн [шу]лай тип хәбәр итте: Корея халыҡ-демократик республикаһының Халыҡ армияһы [ғәскә]рҙәре, Ҡытай добровольцтәре менән бергәләп, күп кенә юнәлештәрҙә Америка һәм Англия интервенттәренең контратакаларын кире ҡаҡтылар һәм уларға [ҙур] юғалтыуҙар килтерҙеләр.

Стокгольмда совет балалары яһаған һүрәттәрҙең күргәҙмәһе асылды

СТОКГОЛЬМ, 23 май. (ТАСС). С[овет] балалары эшләгән һүрәттәрҙең һәм [...] менән эшләнгән художестволы иш[...]ләрҙең Стокгольмда Милли музей [...]һында күргәҙмәһе асылды.

Милли музей директоры профе[ссор] О. Шельд күргәҙмәне асып, котлау [...]мәре һөйләне. СССР-ҙың Швеция[ла]ғы посолы К. К. Родионов яуап һүҙе [менән] сығыш яһаны, ул Швеция менән С[СР] араһында культура бәйләнеше [...] күргәҙмәнең әһәмиәтен билдәләне.

Күргәҙмәне асыуҙа Ҡытай Халыҡ Р[ес]публикаһының Швециялағы посол[...], халыҡ демократияһы илдәре дипломатик миссияларының етәкселәре, шулай уҡ Швеция общественносенең күп һанлы вәкилдәре ҡатнашты.

Бер үк ваҡытта Милли музейҙа Шв[е]ция балалары һүрәттәренең күргәҙмәһе асылды.

Көнбайыш Германия халҡы ремилитаризациялауға ҡаршы килә

БЕРЛИН, 23 май. (ТАСС). АДН агентствоһының Дюссельдорфтан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Көнбайыш Германияны ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн халыҡтан һорау алыуҙың барышы [...] кампанияның әлеге-әле ҙурыраҡ [...] ала барыуын күрһәтә.

Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 22 майҙа 6.912 кешенән һорау алынған. Уларҙың 6.419-ы ремилитаризациялауға ҡаршы һәм 1951 йылда тыныслыҡ договорын төҙөү өсөн тауыш биргән.

Связь учреждениеләре хеҙмәткәрҙәренең забастовкаһы бөтә Грецияны солғап алды

АФИНА, 23 май. (ТАСС). 23 майҙа бөтә илдә ОТЗ (хосуси телеграф, телефон һәм радиокомпания) хеҙмәткәрҙәре забастовка башланылар. Уларҙың экономик хәле һәләкәтле булып ҡалыуҙа дауам итә. «Этнос» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, бөтә илдә бәйләнеш өҙөлгән. Хатта хәрби характерҙағы телеграммалар ҙа бирелмәйҙәр.

Брюсселдәге халыҡ-ара конкурста совет скрипкасыларының еңеүе

ГААГА, 24 май. (ТАСС). Киҫә Брюсселдә скрипкасыларҙың халыҡ-ара конкурсы тамамланды.

Совет скрипкасыларының сығыштары тулы триумф менән үтте, улар виртуоз башҡарыуҙарҙы һәм совет музыка мәктәбенең өҫтөнлөктәрен күрһәттеләр. Жюри беренсе урынды Леонид Коган (СССР) бирҙе. Икенсе урынды шулай уҡ совет скрипкасыһы Михаил Вайман; өсөнсө урынды — Элизабет Черфальва (Венгрия); дүртенсе урынды — Тео Олоф (Голландия); бишенсе урынды — Ольга Каверзенова (СССР); алтынсы урынды — Хели Гиглер (Австрия); етенсе урынды — Алексей Горохов (СССР); һигеҙенсе урынды — Лубен Йорданов (Болгария); туғыҙынсы урынды — Фредди Лэк (АҠШ); унынсы урынды — Поль Лукан (Франция); ун беренсе урынды — Пьер Дампанбо (АҠШ); ун икенсе урынды — Кейс Коопер (Голландия) алды.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Электросварщиктәр

Паровоз будкаһы эсендә зәңгәр яҡтылыҡ балҡый. Иреғән металл осҡондары вольт дуғаһы аҫтынан сәжғырып сығалар ҙа, меңдәрсә йондоҙҙарҙың бер үк ваҡытта атылыуҙарын хәтерләтеп, төрлө яҡҡа һибеләләр. Электросварщиктең күләгәһе будка стенаһында һикерегләй...

Тап ошо ваҡытта өҫтөнә брезент костюм кейгән урта буйлы икенсе бер кеше будкаға йүгереп инде. Уның металл саңы ҡунған, тирләгән йөҙө сереҙ ине.

— Иптәш Евдокимов, — тине ул тыныс, ләкин киҫкен тон менән. — Ниңә был тиклем осҡон сыға? Хикмәт ниҙә?

Таҙа ғына кәүҙәле Евдокимов күтәрелеп ҡараны.

— Белмәйем, иптәш бригадир, — тине ул тәрән һулыш алып.—Йөй барлыҡҡа килмәй, вольт дуғаһы металлдың йәбештереләһе урынын үтәнән-үтә яндырып сыға. Үҙем дә аптыраным инде.

Бригадир күҙҙәрен хәйләкәр ҡыҫа төшөп, өйрәнсегенгә йөҙө тәүге тапҡыр тиерһең, баштан-аяҡ һөҙөп сыҡты. — Уйларға кәрәк, иптәш, уйларға. Һәр бер эшкә ижад күҙлегенән ҡарап башҡарырға кәрәк. Бына үҙең күрәһең, һин сварить иткән тимерҙең ҡалынлығы өс кенә миллиметр, ә һин уны 10 миллиметр ҡалынлығындағы тимерҙе йәбештерерлек көслө ток менән эшләргә тырышаһың. Генераторҙы, мин өйрәткәнсә, металдың ҡалынлығына ҡарап көйләмәгәнһең.

Был — йыйыу цехының гарнитура участкаһында эшләүсе электросварщиктәр бригаҙаһы бригадиры Фәрит Фәхретдинов ине. Ул бик тыныс тәбиғәтле, ләкин ҡыйыу хәрәкәтле эшсе.

ФЗО-ны тамамлап сыҡҡандан бирле Фәрит өсөнсө йәш эшсене үҙ һөнәренә өйрәтә инде. Ул уларҙың етешһеҙлектәре булһа ҡайғыра, ә уңыштарын күреп шатлана.

Бына хәҙер ҙә был һәләтле һәм үҙенең өйрәнсегә тураһында атайҙарса хәстәрлек күрһәтеүсе бригадир Фәхретдинов Евдокимовтың яңылыш эшләүен күреп бошондо, әсенән генә: «Күрәһең, мин уны насар өйрәткәнмен» тип үҙен-үҙе шелтәләп алды, ләкин асыуланманы. Өйрәнсегенгә генератор эргәһенә алып килеп уны нисек көйләргә өйрәтте, унан һуң оҫта ҡул хәрәкәте менән тотҡосто алып үҙе эшләргә тотонды. Күҙҙәрҙе нурын алырлыҡ көслө яҡтылыҡ будка эсендә яныуын талпына башланы. Иреғән металл осҡондары ситкә бик аҙ сасрапе. Юғары сифатлы йөй йәбештерелгән урында тигеҙ ҡатлам булып һуҙылып ҡалды.

Бригадир бер аҙ эшләне лә тотҡосто өйрәнсегенә һуҙҙы:

— Мәгеҙ, иптәш Евдокимов, дауам итегеҙ.

Һәм Евдокимов, Фәритте шатландырып, әйбәт кенә эшләй башланы.

* * *

Фәрит 1947 йылдың октябрендә Шишмә районы Арслан ауылынан Өфөләге 15-се номерлы ФЗО мәктәбенә килгәйне.

ФЗО-ла Фәрит бары тик отличноға ғына уҡыны һәм 4-се разрядлы электросварщик профессияһына эйә булып, Өфө паровоз ремонтлау заводына эшкә килде.

Йәш электросварщик тарафынан башҡарылған эш участка мастеры Кузнецовтың иғтибарын бик тиҙ үҙенә тартты. «Бынан яҡшы работник сығыр, бик һәләтле тойолә», тип уйланы ул уның тураһында һәм яңылышманы. Фәрит Фәхретдинов ысындан да яҡшы сифатлы итеп эшләй, машинаны көйләй белә, эш инструменттәрен теҙек, таҙа килеш тота һәм хеҙмәт дисциплинаһын бер ваҡытта ла боҙмай ине.

Йәш егеттең хеҙмәт күрһәткесе һаман үҫә барып, 150 процентҡа етте һәм берҙән-бер көндө цехтың Почет таҡтаһына яҙылды. Был хәл участкалағы тәжрибәле электросварщик Ғәйнулла Хәкимовты көнләштереп ебәрҙе. «Һе, йәп-йәш кенә бер егет Почет таҡтаһына яҙылды, уның мине уҙып китеүе лә бар», тип уйланы ул һәм ҡыҙыу эш процесында Фәхретдинов эшләгән яҡҡа күҙ ташланы; уның ихлас күңел менән бирелеп эшләүен күреп башын сайҡап ҡуйҙы. «Ой, уҙыр был егет, уҙыр... Ә мин... кадровик эшсе, электросварщик...» тигән уйҙар үтте уның башынан.

Ул уйлана, ә вольт дуғаһы эш темпының көсәйгәндән-көсәйә барыуын белдереп, әрләкһеҙ бышылыҡ менән сытырҙап ҡабынып тора. Азот газының һулышты еңеләйтеүсе еҫе һауаға тарала...

Ғәйнулла Хәкимовта ҡайһы саҡтарҙа шәхси дан артынан ҡыуыу теләге тыуа ине. Ләкин йөрәк түренән сыҡҡан сәләмәт аҡыл уның был уйын аҫтын-өҫкә килтереп ташланы. «Берлектә — терәклек» тине ул һәм цехтағы барлыҡ йәш эшселәр менән дә үҙенең күп йылдар буйына тупланған бай хеҙмәт тәжрибәһен уртаҡлашты, Фәриткә лә теләп ярҙам итте һәм шуның менән дөйөм хеҙмәт күтәрелешенә иңешергә ынтылды.

Фәриттең теоретик белеме практикала һаман ныҡый, тәрәнәйә һәм байый барҙы. Әҙер продукцияның күләме көндән-көн арта һәм уның сифаты ла юғары баһалана башланы.

Айҙар үттеләр. Фәхретдинов маҡтаулы электросварщик Хәкимов менән социалистик ярышҡа сыҡты. Хәҙер ҙә дауам итеүсе был ярыш һәр ике яҡтың да хәтерендә оҙаҡ ваҡыт үҙенән эҙен ҡалдырырлыҡ булып башланып китте.

Ләкин еңеү еңел бирелмәне. Ул алыҫ араһыҡта ярышыусы көслө ике йүгереүсенә хәтерләтте. Йәш электросварщик бер генә минут ваҡытын да әрәм итмәйенсә бөтә белемен, энергияһын һалып эшләне һәм аралар ғәйәт ҙур тиҙлек менән яҡынайҙылар.

Был йәш эшсе кадровик эшсе менән тиңләште. Ләкин Хәкимовҡа хеҙмәт тәжрибәһе кәрәк ине. Ул эштең насарлана барыуын күреп, финиш алдынан бөтә көсөн һалып йүгергән спортсмен кеүек, тырышып эшләне һәм Фәритте тағы ла уҙып китте.

Алдынғылыҡ өсөн көрәш дауам итте. Ләкин был маҡтаулы һәм намыҫлы көрәштә Хәкимов биреште. Йәш электросварщик Фәхретдинов смена нормаһын 200 процентҡа үтәү мөмкинлегенә ирешеп һәм социалистик ярышта беренселекте яулап алды.

Был онотолмаҫ көндә Хәкимов Фәхретдинов эргәһенә килде лә, уға үҙенең ҡулдарын һуҙҙы һәм тулҡынланып:

— Рәхмәт һиңә, еңеү һиндә, тәбрик итәм, — тине.

Фиҙакәр хеҙмәте өсөн уға администрация тарафынан бер нисә тапҡыр рәхмәт әйтелде. Фәрит электросварщиктәр бригадиры итеп үрләтелде.

Фәхретдинов бригадир булғас, өйрәнсеге Евдокимов өсөн генә түгел, ә бригаданың бөтә дүрт члены өсөн дә, улар тарафынан башҡарылған эштең сифаты, күләме һәм һәр-бер айырым операциялағы эш алымдарын дөрөҫ үтәү өсөн дә яуаплылыҡты тойҙо. Ләкин ул етәкселек итәсәк бригада үҙенең смена заданиеһен үтәй алмауы менән характерлы ине.

Фәрит производство заданиеһенең үтәлмәүен башҡарылған бик күп эштең бракҡа сығыуынан күрҙе һәм брак биреүҙең төп сәбәптәрен асыҡлау өсөн бригада члендары менән һөйләшергә ҡарар итте; уларҙы йыйылышҡа саҡырҙы.

Дөрөҫөн әйткәндә, был — йыйылыш түгел, ә бер семья члендарының хеҙмәт тураһында бик ябай рәүештә асыҡтан-асыҡ фекер алышыуҙары ине.

Һәм һөйләшеү бик йәнле дауам итте. Бында Александр Петров — практик тәжрибәһенең аҙ булыуы, Ғәбдулла Йәһүдин һәм Миңлебай Мосабиров иптәштәр сварҡаланырға тейешле металдарҙың технологияһын белеп еткермәүҙәре һәм шуның арҡаһында сварҡалау генераторын да яҡшылап көйләй белмәүҙәре тураһында ысын күңелдәренән әйттеләр. Шунда уҡ етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү сараһы күрелде. Бригада члены Ғәйнулла Хәкимов Петровты, ә Фәхретдинов үҙе Йәһүдинде шефлыҡҡа алырға булдылар.

Был сараларҙы әҙмә-эҙлекле рәүештә тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә хеҙмәт һәм сифат күрһәткестәре әкренләп күтәрелә башланы.

Хәҙер был бригада бары тик яҡшы сифатлы продукция ғына етештерә һәм смена заданиеһен 1,5—2 тапҡырға арттырып үтәй.

Бығаса тиклем артта һөйрәлеп килгән бригаданың ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә әҙәклектән сыға алыуы һәм алдынғылар сафына баҫыуы тураһында һүҙ сыҡҡанда цех парторгы иптәш Вялов та:

— Һүҙ юҡ, Фәхретдиновта ойоштороу һәләтлеге ҙур,—ти.—Ул һәр бер электросварщиктең ауырлыҡтан ерелә тейә белде, уларҙа яуаплылыҡ тойғоһон уятты.

Эйе, был ысынлап да шулай. Үҙенең һәм бригада члендарының техник һәм политик белем дәрәжәләрен күтәреү өҫтөндә арымай-талмай эшләүсе 5-се разрядлы йәш электросварщик бирелгән заданиеһен тайпылышһыҙ рәүештә срогында үтәлеүен тикшерә, туҡтауһыҙ ижад итә, стахановсыларҙың алдынғы эш методтарын ҡыйыу рәүештә производствоға индерә. Ул цехҡа башҡаларҙан һәр ваҡыт алданыраҡ килә һәм кәрәк булһа, сменанан һуң да ҡалып эшләй, общественный эштәрҙә лә актив ҡатнаша.

Уның бригадаһы халыҡ-ара байрам көнө — 1 Майҙы ҙур производство уңыштары менән ҡаршыланы һәм хәҙер ҙә яҡшы эшләй.

Ә. Байрамов.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — «РУСАЛКА».

Кис 8 сәғәт 30 минутта башлана.

Рус драма театрында—«ТОРМОШ ӨСӨН КӨРӘШ».

Кис сәғәт 8-ҙә башлана.

«Октябрҙә» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘАРЫ».

«Салауатта» — «ПӘШЕРЕН МИССИЯ» һәм «ТАНКЕР ДЕРБЕНТ».

«Уралда» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘАРЫ».

Матросов исемендәге кинотеатрҙа «ЗОЯ», «ШАТ ЕГЕТТӘР».

«Иҙәлдә» — «ДУНАЙ БАЛАҺЫ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П04306. Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 103(8820)
1951 йыл
27
МАЙ
Йәкшәмбе

Хаҡы 20 тин.

Б Ө Г Ө Н Г Ө   Н О М Е Р Ҙ Ә:

ССР Союзы Министрҙар Советы Председателе иптәш Иосиф Виссарионович Сталингә (1-се бит).
Беҙҙең республикала (1-се бит).
СССР ГОСУДАРСТВО АКАДЕМИЯ ҘУР ТЕАТРЫНЫҢ 175 ЙЫЛЛЫҒЫНА ҠАРАТА. А. Анисимов. — Совет культураһының байрамы (2-се бит).
РЕСПУБЛИКАБЫҘ ЭКОНОМИКАҺЫНЫҢ ҺӘМ КУЛЬТУРАҺЫНЫҢ АРТАБАН СӘСКӘ АТЫУЫ ӨСӨН. С. Н. Тайчинов.—Башҡорт халҡының культура үҫеше тураһында сталинсе хәстәрлек (2-се бит).
Р. Тәрегулова.—Ленинсе-сталинсе милли политиканың тантанаһы (2-се бит).
Н. Тимерғазин. — Шатлыҡлы ваҡиға (2-се бит).
ПРОДУКЦИЯНЫҢ ҮҘЕНӘ ТӨШӨҮ ХАҠЫН КӘМЕТЕҮ ҺӘМ СИФАТЫН ЯҠШЫРТЫУ — БӨТӘ ПРЕДПРИЯТИЕЛӘРҘЕҢ НАМЫҪ ЭШЕ. Б. Ишдәүләтов. — Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн көрәштә (3-се бит).
Н. Шәматов. — Тағы ла яҡшыраҡ эшләйәсәкбеҙ (3-се бит).
СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. Н. Воженников. — Сәсеүлектәрҙе химик ысул менән утау (3-се бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (3-се бит).
ҠАЙҘА УҠЫРҒА БАРЫРҒА (4-се бит).

Металл һыныҡтары йыйнау— государство әһәмиәтендәге ҙур эш

Беҙҙең Тыуған илебеҙ — бөйөк социалистик индустриаль держава. Ул алдынғы промышленность, донъяла иң эре колхозсы ауыл хужалығы һәм юғары техникаһы ил. Халыҡ хужалығының башҡа тармаҡтары менән бер рәттән, ҡара металлургия ла үҫә һәм нығый. Ул беҙҙең халыҡ хужалығының нигеҙен тәшкил итә.

Большевиктар партияһы, Совет хөкүмәте һәм иптәш Сталин илебеҙҙә металлургия промышленносын үҫтереүгә даими иғтибар күрәләр. Хәҙер илебеҙҙә ҡара металлургия халыҡ хужалығының алдынғы техникаһы менән ҡоралланған ҡеүәтле тармағына әйләнде. Ҡара металлургия өлкәһендә һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ пландың заданиеләре ҡорос һәм прокат етештереү буйынса арттырып үтәлделәр. 1950 йылда ҡара металл етештереү дөйөм алғанда һуғыштан әлекке кимәлдән 45 процентҡа уҙып китте. Суйын ҡайнатыу ... процентҡа, ҡорос — 49 процентҡа, прокат етештереү — 59 процентҡа артты.

Ләкин совет халҡы өлгәшелгәндәр менән генә ҡәнәғәтләнмәй. Большевиктар партияһы, иптәш Сталин илебеҙҙең экономик ҡеүәтен артабан үҫтереү өсөн көрәшкә саҡыралар. Халыҡ хужалығының тиҙ темптар менән артабан үҫеүе, коммунизм төҙөлештәре илебеҙҙә ҡара металлургияны артабан үҫтереүҙе талап итәләр. Металл өсөн көрәш — государство әһәмиәтендәге мөһим бурыс ул.

Большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте металл етештереүҙе үҫтереүҙә резервтарҙы һәм мөмкинлектәрҙе файҙаланырға саҡыралар. Бындай резервтарҙың береһе — металл ватыҡ-һыныҡтарын йыйнау һәм мартен мейестәрендә уны ҡайтанан эшкәртеү.

Металл ватыҡтары — металлургия өсөн иң мөһим, иң осһоҙға төшәүсе сырьё. Металл ватыҡтарын йыйнау һәм ҡайтанан эшкәртеү [illegible]

[illegible]

... талл ватыҡтары йыйнау эшен насар ойошторалар. Республикабыҙҙың күп кенә районҙарында, Белорет, Стәрлетамаҡ, Октябрьск ҡалаларында предприятие етәкселәре, партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары был мөһим эште ойоштороуҙы баһалап еткермәйҙәр.

«Главвторчермет»тың Башҡортостан управлениеһе металл йыйнау эшен республиканың үҙәк өлөшөндәге ҡалаларҙа ғына алып бара, ә бөтә республика территорияһында йыйнауҙы ойошторманй. Ваҡ промышленность предприятиеләрендә, тимер юлында, совхоздарҙа, МТС-тарҙа һәм колхоздарҙа халыҡтан металл ватыҡтарын йыйнау эше ҡәнәғәтләнерлек ойошторолмаған. Күп кенә предприятиеләрҙә металл ватыҡтарын йыйнап тапшырыу урынына уны сүплеккә түгәләр, йәки ул металл ватыҡтары предприятие тирәһендә өйөлөп яталар. Металл ватыҡтары йыйнау эшенә киң общественность, эшселәр коллективы, колхозсылар, комсомолецтар, пионерҙар етерлек тиклем йәлеп ителмәйҙәр. Шуның һөҙөмтәһендә республикала үткән йылда һәм 1951 йылдың беренсе кварталында предприятиеләрҙә металл ватыҡтары йыйнау һәм ҡайтанан эшкәртеүгә оҙатыу планы үтәлмәне.

Башпотребсоюз системаһында металл һыныҡтарын йыйнау эше бигерәк тә насар тора. Райпотребсоюздар халыҡтан металл һыныҡтарын йыйнау эшен ойошторорға бурыслылар. Ләкин республикабыҙҙың күп кенә районҙарында райпотребсоюз етәкселәре был эштә бөтөнләй баһаламайҙар. Абзан, Әбйәлил, Баймаҡ, Благовещен, Борай, Дыуан, Иглин, Ҡалтасы, Учалы, Нуримән, Йомағужа һәм башҡа бик күп районларҙа металл һыныҡтарын йыйнау һәм ҡайтанан эшкәртеү өсөн тапшырыу эше бөтөнләй башланмаған. Ошо йылдың дүрт айы буйынса был районда[illegible]

[illegible]

ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттәре бүлек мөдирҙәре семинары

[illegible]

БЕЛДЕРЕҮ

1951 йыл 31 майҙа, кис 7 сәғәт 30 минутта, ҡала партактивы бинаһында (Карл Маркс урамы, 25-се номер) хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советының дүртенсе сессияһы саҡырыла.

Ҡала Советы исполкомы.

Чкалов өлкәһе нефть промышленносеның эшселәренән, эшсе ҡатын-ҡыҙҙарынан, мастерҙарынан, техниктәренән, инженерҙәренән һәм хеҙмәткәрҙәренән

Мәскәү, Кремль

ССР Союзы Министрҙар Советы Председателе
Иптәш Иосиф Виссарионович
СТАЛИНГӘ

Ҡәҙерле Иосиф Виссарионович!

Беҙ, Чкалов өлкәһенең нефть промышленносе эшселәре, эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, мастерҙәре, техниктәре, инженерҙәре һәм хеҙмәткәрҙәре, совет халҡының һәм бөтә прогрессив кешелектең бөйөк һәм тәрән аҡыллы юлбашсыһы һәм остазы, Һеҙгә, үҙебеҙҙең ялҡынлы сәләмебеҙҙе ебәрәбеҙ һәм оҙон ғүмер һәм һаулыҡ теләйбеҙ.

Совет халҡы үҙенең тыуған Ленин — Сталин партияһы һәм Совет Хөкүмәте етәкселегендә беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөү тураһында Һеҙҙең тарихи күрһәтмәләрегеҙҙе үтәүҙә бөйөк еңеүҙәргә өлгәште. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ план срогынан алда үтәлде. Промышленность һәм ауыл хужалығы производствоһының һуғышҡа тиклемге кимәле байтаҡ уҙып кителде. тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың бөйөк планы уңышлы үтәлә. Волгала, Днепрҙа, Аму-Дарьяла коммунизмдең бөйөк төҙөлештәрен тормошҡа ашырыу башланды, суднолар йөрөй торған Волга — Дон каналын төҙөү тамамлана.

Беҙҙең илебеҙ хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең киләсәгенә шатлыҡ һәм ышаныс менән ҡарайҙар, сөнки большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте уларҙың яҡшы көнкүреше тураһында арымай-талмай хәстәрлек күрәләр.

Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына государствоның ваҡлап һатыу хаҡтарын иҫәп буйынса дүртенсе тапҡыр арзанайтыу беҙҙең илебеҙ ҡалаларында һәм ауылдарында әленән-әле үҫә барған торлаҡ көн-күреш һәм культура төҙөлешә, эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль эш хаҡының артыуы, колхозсылар доходтарының артыуы һәм Совет Хөкүмәтенең беҙҙең халҡыбыҙҙың тормошон яҡшыртыуға юнәлтелгән башҡа күп кенә саралары был хәстәрлекте иҫбатлау булып тора.

Нефть промышленносенең башҡа тармаҡтары менән бер рәттән, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты срогынан алда үтәүе тураһында СССР Государство План Комитетенең һәм Үҙәк Статистика Управлениеһенең белдереүен ишеткәс, беҙ бик шатландыҡ, һәм был өлкәлә беҙҙең хеҙмәтебеҙҙең дә өлөшө булыуы менән беҙ ғорурланабыҙ.

Большевиктар партияһының, Совет Хөкүмәтенең һәм, иптәш Сталин, Һеҙҙең көндәлек һәм әленән-әле арта барған ярҙамығыҙ һәм хәстәрлегегеҙ арҡаһында Чкалов өлкәһенең нефть промышленносе һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында байтаҡ үҫте.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыктағы эшебеҙгә йомғаҡ яһап, беҙ Һеҙгә, Иосиф Виссарионович, Чкалов өлкәһенең нефтселәре, бөтә совет халҡы кеүек, киң йәйелдерелгән социалистик ярыш нигеҙендә һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәнеләр, тип белдереүебеҙ менән шатбыҙ.

Чкалов өлкәһендә нефть сығарыу тотош алғанда 1950 йылда, 1946 йылға сағыштырғанда, 1,4 тапҡырға, скважиналарҙы бораулау — 3,8 тапҡырға, нефть эшкәртеү — 3,8 тапҡырға, төҙөлөш-монтаж эштәре күләме — 1,3 тапҡырға артты.

Үткән биш йыллыкта 51.200 квадрат метр торлаҡ майҙаны, яңы мәктәптәр, клубтар, больницалар, магазиндәр, столовойҙар, мунсалар, балалар баҡсалары һәм яслеләре төҙөлдө һәм эксплуатацияға тапшырылды.

1950 йылда производствоның үҫеше, 1949 йылға ҡарағанда, нефть сығарыу буйынса 25 процент һәм нефть эшкәртеү буйынса 18,1 процент тәшкил итте.

Ләкин беҙ, Чкалов өлкәһенең нефтселәре, эшебеҙҙәге етешһеҙлектәрҙе асыу һәм бөтөрөү иң мөһим бурыстарҙың береһе булып тороуы тураһында Һеҙҙең күрһәтмәләрегеҙҙе хәтерҙә тотоп, өлгәшелгәндәр менән тынысланып ҡала алмайбыҙ.

Беҙҙә аныҡ, ритмлы эшләүгә, производствоның юғары культураһына, хеҙмәтте ойоштороуҙың алдынғы методтарын киң индереүгә, хужалыҡ иҫәбен индереүгә өлгәшмәгән һәм государство планын үтәмәүсе айырым предприятиеләр, промыслалар һәм төҙөлөш ойошмалары бар әле.

Беҙҙең эшебеҙҙәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн бөтә көсөбеҙҙе һалырға һәм бораулау һәм нефть сығарыу, нефть продукттарын етештереү, промышленность объекттарын, торлаҡ йорттарын һәм культура көн-күреш учреждениеларен хәрәкәткә индереүҙең 1951 йылғы планын срогынан алда үтәүҙә ныҡышмалы өлгәшергә Һеҙгә, Иосиф Виссарионович, вәғәҙә итәбеҙ.

1951 йылғы планды срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш йәйелдереүсе Башҡорт АССР-ы һәм Куйбышев өлкәһе нефтселәренең өлгөһөнә эйәреп, беҙ, Чкалов өлкәһенең нефтселәре, үҙ мөмкинлектәребеҙҙе һәм резервтарыбыҙҙы иҫәпкә алып, түбәндәге социалистик йөкләмәләрҙе алабыҙ:

«Бугурусланнефть» тресының предприятиеләре буйынса

1. 1951 йылғы планды срогынан алда үтәргә һәм пландан тыш 5 мең тонна нефть бирергә.

2. Геология-техник саралар комплексен үткәреү юлы менән иҫке скважиналарҙан нефть сығарыуҙы 20 мең тоннаға арттырыуға өлгәшергә.

3. Бораулауҙың йыллыҡ планын 1951 йылдың 21 декабренә үтәргә һәм пландан тыш 1 мең 200 метр бораулауға, шул уҡ ваҡытта эксплуатацион һәм разведка бораулауы буйынса бораулау тиҙлеген, 1950 йылға ҡарағанда, 20 процентҡа һәм кренлиус бораулауы буйынса — 6 процентҡа арттырырға.

1951 йылда проходканың дөйөм планының кәм тигәндә 60 процентен турбина ысулы менән бораулаға.

4. Хеҙмәт етештереүсәнлеген планға ҡарағанда нефть сығарыу буйынса 2 процентҡа һәм бораулау буйынса 1 процентҡа күтәрергә.

5. Нефтең бер тоннаһының үҙенә төшөү хаҡын планға ҡарағанда 2 процентҡа кәметергә һәм тап эшмәкәрлектә бер миллион һум экономия яһарға.

6. Бораулау эштәренең хаҡын планға ҡарағанда 2 процентҡа кәметергә һәм пландан тыш 500 мең һум файҙа бирергә.

7. Геология-разведка конторалы тарафынан әҙерләнгән алты майҙанда тәрән разведка бораулауын башларға. 1951 йылда бер яңы ятҡылыҡты асырға һәм бер ятҡылыҡты промышленность эксплуатацияһына тапшырырға әҙерләргә.

8. Төҙөлөш-монтаж эштәренең йыллыҡ программаһын хужалыҡ ысулы менән 1951 йылдың 21 декабренә үтәргә. Планда ҡаралған 1200 квадратметр урынына 2400 квадратметр яңы торлаҡ майҙанын эксплуатацияға тапшырырға.

9. 1951 йылда күрсәтләр селтәрендә 809 нефтсе әҙерләргә һәм ҡайтанан әҙерләргә.

10. Рационализаторлыҡ һәм уйлап табыу тәҡдимдәрен индереүҙән 1951 йылда 2 миллион һум экономия алырға.

Берләшкән кенсығыш газ промыслаһы буйынса

1. Тәбиғи газ сығарыуҙы, 1950 йылға ҡарағанда, 2,5 процентҡа арттырырға һәм пландан тыш 5 миллион кубометр газ бирергә.

2. Тәбиғи газды сығарыуҙа һәм ташыуҙа хеҙмәт етештереүсәнлеген, 1951 йылғы планға ҡарағанда, 5 процентҡа күтәрергә.

3. Газдың үҙенә төшөү хаҡын, 1951 йылғы планға ҡарағанда, 5 процентҡа кәметергә һәм төп эшмәкәрлек буйынса пландан тыш 700 мең һум файҙа бирергә.

4. Төҙөлөш-монтаж эштәренең йыллыҡ программаһын хужалыҡ ысулы менән срогынан алда үтәргә һәм 1951 йылдың 1 июленә 500 квадрат метр яңы торлаҡ майҙанын эксплуатацияға индерергә.

Нефть эшкәртеүсе заводтар буйынса

1. Нефть эшкәртеү буйынса государство планын 1951 йылдың 21 декабренә үтәргә.

Тонок нефть продукттарын һайлап алыуҙы, планға ҡарағанда, 0,5 процентҡа тәрәнәйтергә.

2. Хеҙмәт етештереүсәнлеген планға ҡарағанда, 3 процентҡа күтәрергә.

3. Сырьёның һәм нефть продукттарының производствола юғалыуын, план нормаларына ҡарағанда, 0,6 процентҡа кәметергә.

4. План нормаларына ҡарағанда, 0,5 процент яғыулыҡҡа, 4 процент электр энергияһына, 25 мең мегокалорийға тиклем парға һәм бер миллион һумлыҡ реагенттарға экономия яһарға.

5. Нефть продукттарының үҙенә төшөү хаҡын, планға ҡарағанда, 1,2 процентҡа кәметергә һәм пландан тыш 3 миллион һум накопление бирергә.

6. Нефть эшкәртеүҙең яңы технологик процестарын үҙләштерергә һәм яңы сорт нефть продукттарын етештерә башларға.

7. Хужалыҡ ысулы менән 1290 квадрат метр яңы торлаҡ майҙанын төҙөргә һәм эксплуатацияға индерергә.

8. Установкаларҙы капиталь ремонтлауҙы срогынан алда һәм сифатлы итеп үткәрергә һәм ремонт сроктарын, планға ҡарағанда, 15 процентҡа ҡыҫҡартырға.

9. Күрсәтләр селтәрендә 345 кешене әҙерләүҙе һәм ҡайтанан әҙерләүҙе үткәрергә.

10. Рационализаторлыҡ һәм уйлап табыу тәҡдимдәрен индереүҙән быйыл 3,5 миллион һум экономия бирергә.

Төҙөлөш ойошмалары буйынса

1. Төҙөлөш-монтаж эштәренең йыллыҡ планын Сталинсе Конституция көнөнә — 1951 йылдың 5 декабренә үтәргә һәм промышленность объекттарын эксплуатацияға тапшырыуҙы тәьмин итергә.

2. Торлаҡтар, культура көн-күреш объекттарын төҙөүҙең йыллыҡ планын Бөйөк Октябрь революцияһының 34 йыллығына үтәргә. 1951 йылда 15 мең 200 квадрат метр яңы торлаҡ майҙанын һәм 8 культура көн-күреш учреждениеһен эксплуатацияға тапшырырға.

3. Төҙөлөш-монтаж эштәрендә машиналарҙы, механизмдарҙы һәм оборудованиеларҙы тулыһынса файҙаланырға. Уларҙы файҙаланыу дәрәжәһен директив урғаса прогрессив нормаларға тиклем еткерергә, күп хеҙмәт талап итеүсе бөтә төҙөлөш эштәрен механизацияларға.

4. Төҙөлөш-монтаж эштәрендә хеҙмәт етештереүсәнлеген планға ҡарағанда, 3 процентҡа күтәрергә.

5. Төҙөлөш-монтаж эштәренең үҙенә төшөү хаҡын, 1951 йылғы планға ҡарағанда, 0,2 процентҡа кәметергә.

6. 320 кешене төҙөүсе кадрҙар итеп әҙерләргә һәм ҡайтанан әҙерләргә.

Беҙҙең тыуған большевиктар партиябыҙ, ҡәҙерле Иосиф Виссарионович, Һеҙҙең тарафтан рухландырылып беҙ, Чкалов өлкәһенең нефтселәре, Советтар Союзының бөтә хеҙмәтсәндәре менән бергә беҙҙең һөйөклө социалистик Тыуған илебеҙ бәхетенә фиҙакәр хеҙмәт итәсәкбеҙ.

Беҙ, ҡәҙерле иптәш Сталин, Һеҙгә, үҙебеҙҙең социалистик йөкләмәләребеҙҙе намыҫ менән үтәргә вәғәҙә итәбеҙ.

Йәшәһен беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙ— Совет Социалистик Республикалар Союзы!

Йәшәһен Ленин—Сталин партияһы — совет халҡының бөтә еңеүҙәрен рухландырыусы һәм ойоштороусы!

Йәшәһен беҙҙең бөйөк юлбашсыбыҙ һәм остазыбыҙ иптәш Сталин!

Чкалов өлкәһенең нефть промышленносе эшселәренең, инженер-техник работниктәренең һәм хеҙмәткәрҙәренең дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

Ярышта беренселек өсөн

Байҡыбаш. (Телеграф аша). Беҙҙең «Красный Октябрь» колхозы яҙғы сәсеүҙе районда беренсе булып тамамланы. Бөтәһе 1219 гектар урынына, 1268 гектар майҙанда ашлыҡ сәселеп, план 104 процентҡа үтәлде. Шул уҡ ваҡытта киләһе йыл урожайы тураһында ла хәстәрлек күрәбеҙ. 1 июнгә тиклем пар һөрөүҙе лә тамамлайбыҙ. Беҙ быға техниканы киң файҙаланыу арҡаһында өлгәшәбеҙ.

Колхоз йылҡысылыҡты үҫтереүҙә лә ҙур уңыштарға өлгәште. Ике йыллыҡ план срогынан алда үтәлде.

Хәҙер беҙ юл төҙөү айлығына ҡушылдыҡ, инде ике күпер эшләнде. Төҙөлөш ағастары әҙерләйбеҙ. Малсылыҡ фермаһында ҙур төҙөлештәр үткәрәбеҙ.

Беҙҙең колхоз социалистик ярышта беренселекте алыу өсөн көрәшә.

А. Ильясов,
Байҡыбаш районы «Красный Октябрь» колхозы председателе.

А. Имаев,
колхоз партия ойошмаһы секретаре.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

☆ ☆

Металл һыныҡтары йыйнау

Ишембай ҡалаһының комсомолецтәре һәм йәштәре металл һыныҡтарын йыйнауҙа актив ҡатнашалар. Металл ватыҡ-һыныҡтарын йыйнау буйынса уҙғарылған айлыҡта бөтәһе 21 йәштәр бригадаһы ҡатнашты. 400 тоннанан артыҡ ҡара һәм 40 тоннанан күберәк төҫлө металл һыныҡтары йыйналды.

Был эштә бигерәк тә Сталин исемендәге заводтың, трактор һәм бораулау конторалары, Ишембай нефть эшкәртеү заводы һәм «Ишембайнефть» тресының 1-се, 3-сө промыслалары йәштәре актив ҡатнаштылар. Сталин исемендәге заводтың комсомолец-йәштәре 130 тонна ҡара һәм 30 тонна төҫлө металл йыйнанылар. Заводтың цехтарында был эш менән комсомол комитеты члендары Чараев, Бегинин, Тукаев һәм башҡа иптәштәр етәкселек иттеләр. Һуңғы ваҡытта ғына комсомол комитеты секретары иптәш Горбачев инициативаһында металл киҫәктәре йыйнау буйынса 4 воскресник үткәрелде. Был воскресниктарҙа комсомолецтарҙан Талманов, Панкратов һәм башҡа иптәштәр айырыуса яҡшы эшләнеләр.

Нефть эшкәртеү заводының йәштәре 130 тоннанан артыҡ, бораулау контораһы йәштәре 50 тоннаға яҡын ҡара металл киҫәктәре йыйнап тапшырҙылар.

Өсөнсө номерле нефть промыслаһында ла йәштәр металл ватыҡтары йыйнауҙа актив ҡатнашыҡ итәләр. Тик бер нисә көн эсендә генә мастер иптәш Буранголов етәкселегендә Әхмәтшина, Шахов, Зәлкәрнаев һәм Тарасов иптәштәр 10 тоннанан артыҡ тимер ватыҡ-һыныҡтары йыйнанылар.

Ҡаланың башҡа бик күп предприятиеләрендәге йәштәр ҙә государство әһәмиәтендәге был эште киң йәйелдерҙеләр.

Н. Кинйәбаев,
ВЛКСМ-дың Ишембай ҡала комитетының кадрҙар бүлеге мөдире.

Экзамендәр уңышлы тамамланасак

Иглин районы Таутөмән ете йыллыҡ мәктәбенең уҡытыусылар һәм уҡыусылар коллективы быйылғы экзамендәрҙе, башҡа йылдарға ҡарағанда, ҙур әҙерлек менән башланылар.

Тәүге көндә уҡ бөтә кластарҙа ла экзамендар һәм һынауҙар ҙур ойошҡанлыҡ менән башланды. Беренсе көндә уҡ уҡыусылар үтелгән материалдарҙы яҡшы үҙләштергәнлектәрен күрһәттеләр. Уҡытыусы А. Г. Морозова етәкселек иткән 7-се класс уҡыусыларының бөтәһе лә рус теленән яҙма эште тик яҡшы билдәләргә генә тапшырҙылар.

5-се һәм 6-сы кластарҙа арифметика буйынса уҙғарылған яҙма эш шулай уҡ яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтте, уҡыусыларҙан Ғирфанов, Вәлиев, Лукашов, Сибағатуллин, Даутова, Былов, Хәзиәхмәтова, Ҡорбанова һәм башҡалар экзаменде шулай уҡ «5» билдәләренә генә тапшырҙылар. Уҡытыусылар Смирнова, Мальченко етәкселек иткән кластарҙағы уҡыусылар айырыуса яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтәләр.

Хәҙер, экзамендәр ваҡытында һәр бер фәндән экзамен тамамланғандың һуңында бөтә уҡытыусылар һәм класс етәкселәре ҡатнашлығында педсовет ултырышы уҙғарыла. Өлгәшкән уңышлыҡтарҙы билдәләү менән бер рәттән, булған етешһеҙлектәр тураһында әйтелә һәм уларҙы бөтөрөү саралары күрелә. Был экзамендәрҙең уңышлы алып барылыуына ҙур йоғонто яһай.

Р. Ғәйнуллин.

Дүртйыллы хеҙмәтсәндәре өлгөһөндә

Баймаҡ районы хеҙмәтсәндәре дүртйыллылыларҙың мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына өлгөлө әҙерләү өсөн социалистик ярышҡа саҡырып яҙған мөрәжәғәтен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнәләр. Районда мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү буйынса социалистик ярыш көндән-көн киң ҡолас ала.

Йылайыр ете йыллыҡ мәктәбендә мөрәжәғәтте алыу менән ауыл Советы депутаттары һәм ата-әсәләр ҡатнашлығында йыйылыш булып үтте. Йыйылышта ҡатнашыусылар, дүртйыллылыларҙың саҡырыуын хупланылар, мәктәпте яңы уҡыу йылына әҙерләү буйынса икенсе көндә уҡ практик эш башланды. Мәктәп ерегенә 50 төп алма ағасы, 2500 төп ҡарағат һәм 200 төп башҡа ҡыуаҡтар ултыртылды. 10 парта эшләнде. Совхоз эшселәренең ярҙамында мәктәпкә сезон өсөн кәрәк булған утындың 50 проценты тапып ҡуйылды ла инде. Хәҙер ремонт өсөн материалдар әҙерләнә.

Районның башҡа мәктәптәрендә утын әҙерләү һәм ремонт эштәре башланды.

И. Зарипов.

СССР Государство Академия Ҙур театрының 175 йыллығына ҡарата

Совет культураһының байрамы

ССР Союзы Ленин орденле Ҙур Академия Государство театрына нигеҙ һалыныуға 175 йыл тулды.

Ҙур театрҙың бөтә ижади юлы — идеялы, дөрөҫ, халыҡ өсөн аңлайышлы реалистик опера һәм балет искусствоһы өсөн арыу-талыуҙы белмәйенсә көрәшеү юлы ул.

Мәскәүҙә тәүге даими театрға — Ҙур театрға нигеҙ һалыныу XVIII быуат аҙағында милли үҙ-үҙеңде аңлауҙың күтәрелеүе һәм рус культураһының алға китеүе менән, Сумароков, Херасков, Фонвизин, Аблесимов драматургияһының барлыҡҡа килеүе менән, милли профессиональ актерҙар кадрының тыуыуы һәм үҫеүе менән бәйләнгән. Ҙур театр шул замандың алдынғы общественносе инициативаһы менән барлыҡҡа килде.

Ҙур театрҙың тыуыуы һәм уның тураһындағы тәүге баҫма монография бөтә асыҡлығы менән билдәләй, унда былай тип әйтелгән: «Ҙур Мәскәү театрына, дөрөҫөрәге Петр театрына нигеҙ һалыныу 1776 йылға тура килә».

Мәскәү рус театраль труппаһы яңы театрҙың ядроһы булған, ә балет труппаһын князь Урусовтың крепостной крәҫтиәндәре тәшкил иткәндәр. Театрҙың социаль составы, уның халыҡ музыка ижады менән тығыҙ бәйләнеште булыуы Мәскәү сәхнәһендә, бигерәк тә комедия операһы һәм рус балете өлкәһендә башҡарыу стиленең милли сифаттарын билдәләгәндәр.

Рус музыкаль драматургия театр репертуарында беренсе урынды алды һәм уның идея-художество яғынан йүнәлешен оҙаҡ йылдарға билдәләне. Театр тирәһендә Мәскәү университеты менән бәйләнеште булған иң яҡшы культура көстәре берләштеләр. Театрҙың рус телендә яҙылған бөтә яңы операларҙы (Зорин, Соколовский, Матинский, Пашкевич һәм башҡаларҙың опералары) ҡуйыуы үҙе генә лә ҙур общественный әһәмиәткә эйә булып торҙо.

Театрҙың илебеҙ музыкаль театраль искусствоһын үҙ осорондағы алдынғы общественный фекер кимәленә күтәреүе һәм рус музыкаль театрында демократик традицияларға нигеҙ һалыуы уның тарихи хеҙмәте булып тора. Был традиция театрҙың үҙ замандағы алдынғы общественный-политик идеялар менән даими бәйләнеште булыуҙан, художестволы ижадта реалистик методта милли үҙенсәлектән, репертуарҙың халыҡсан булыуынан һәм башҡарыу оҫталығының юғары булыуынан тора ине.

Ҙур театрҙың барлыҡҡа килеүе Фәндәр Академияһына, Мәскәү университетына нигеҙ һалыу, Ломоносовтың фән өлкәһендә, Радищев һәм Новиковтың публицистика өлкәһендә, Фонвизиндең һәм Державиндең драматургия һәм поэзия өлкәһендә, Суворовтың һәм Ушаковтың хәрби искусство өлкәһендә, Ползуновтың һәм Кулибиндең техника өлкәһендә эшмәкәрлеге кеүек рус культураһының XVIII быуаттағы ҙур ҡаҙаныштары менән бер рәттә тора.

1806 йылда театр «император» театры, государство театры булып әйерелә. Был хәл уның эшенә йоғонто яһай. Репертуарҙа Италия һәм француз композиторҙарының икенсе дәрәжәләге әҫәрҙәре күренә башлай, еңел йөкмәткеле буш, күңел асыу өсөн генә иҫәпләнгән спектаклдәр ҡуйыла. Шул ваҡыттан алып Ҙур театрҙың Октябргә тиклемге булған бөтә тарихы рус демократик театраль культураһы деятелдәренең император дворына, император чиновниктарына ҡаршы көрәше, милли намыҫын юғалтҡан, театрҙың эшмәкәрлеген Көнбайыш Европа музыкаль культураһының ырыны артына ҡуйырға маташҡан, рус тормошо проблемаларынан һәм талаптарынан ситтә булған икенсе дәрәжәләге Көнбайыш илдәр композиторҙарының күңел асыу репертуарҙарын көсләп тыҡҡан император дворына һәм император чиновниктарына ҡаршы көрәш билдәһе аҫтында бара. Театрҙың алдынғы деятелдәре тырышлығында бик ауырлыҡ менән генә рус композиторҙары Алябьев, Кавос, Давыдовтың опералары һәм балеттары сәхнәгә менделәр, был композиторҙар театр ижадында прогрессив тенденцияларҙы үҫтереүгә ярҙам иттеләр.

1825 йылда Мәскәүҙә ҙурлығы һәм эске ҡоролошо яғынан иң яҡшы эшләнеүе менән бығаса тиңләп булмаған Ҙур театрҙың яңы бинаһы төҙөлеп бөтә һәм тантаналы рәүештә асыла. Бина профессор Михайловтың һәм архитектор Бовеның проекты буйынса һалынған. Бина үҙгәртеп ҡоролған хәлендә әле лә йәшәй.

XIX быуаттың тәүге яртыһы Ҙур театр сәхнәһендә өс күренекле рус композиторының: Верстовскийҙың, Алябьевтың һәм Давыдовтың ижады билдәһе аҫтында үтә. Уларҙың эшмәкәрлеге XVIII быуаттың ижади традицияларын нығытты һәм алға үҫтерҙе.

Рус классик музыкаһына нигеҙ һалыусы Глинканың операларын («Иван Сусанин», «Руслан һәм Людмила») ҡуйыу театрҙы ижади үҫтереүҙә тарихи этап булып торҙо. Рус кешеһенең бөтә бөйөклеген һәм милли характер байлығын күрһәтеүсе Глинканың ысын мәғәнәһе менән халыҡсан булған музыкаль драматургияһы реалистик искусствоның гүзәл мәктәбе булды.

Бынан һуңғы йылдар Ҙур театрҙа Глинканың художество традицияларын дауам итеү һәм үҫтереү билдәһе аҫтында үтте. Даргомыжскийҙың («Русалка» — 1859 йыл) һәм Серовтың «Юдифь» — 1865 йыл, «Рогнеда» — 1886 йыл) опералары ҡуйыла. Был спектаклдәр рус опера сәхнәһендә реализмды артабан үҫтереүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булып торҙолар.

Ләкин милли операны һәм культураны үҫтереүсе ошо линияға ҡаршы император театрҙары дирекцияһы икенсе линия үткәрҙе. Ул, уҙған быуаттың 60-сы йылдарында космополитик аристократияның заказын үтәп, театрҙы Италия антрепренеры Мерелли бирҙе. Император чиновниктарының милли репертуарҙы баһаламауын ошо факттар менән күрһәтергә мөмкин: Даргомыжскийҙың тәүге операһы «Эсмеральда» сәхнәгә ҡуйылғанға тиклем дирекция архивында 8 йыл буйына ятҡырылды. Римский-Корсаковтың «Снегурочка» операһы яҙылғандан һуң 10 йыл үткәс кенә сәхнә күрҙе. Бындай миҫалдар аҙ түгел. Шулай итеп император дворы Ҙур театрҙы рус общественносенән һәм музыкаль тормошонан ситләтергә, уны көнбайыш театрҙары тибындағы двор эргәһендәге, тамашасыларҙың демократик таләптәре иҫәпкә алмаған һәм улар өсөн ҡыҙыҡһыҙ булған, халыҡтан айырылған театрға әйләндерергә тырыштылар.

Император дирекцияһының италиянոманияһына ҡаршы идея көрәше — музыкаль культура тарихендә данлыҡлы бит ул. Одоевскийҙең, Чайковскийҙең һәм башҡа музыкаль-общественный деятелдәрҙең мәҡәләләре Ҙур театрҙың милли-үҙенсәлекле үҫеше өсөн көрәштә ҙур роль уйнанылар.

Чайковскийҙең музыкаль драматургияһы театрҙың опера өлкәһендә генә түгел, бәлки балет өлкәһендә лә артабанғы идея ижади үҫешен билдәләне. Чайковскийҙең ижады әҫәрҙәренең тематикаһын, уларҙағы идея һәм образдарҙы киңәйтте, постановкаларға һәм башҡарыуҙарға реалистик методты нығытты, образдарҙың психологик һәм эмоциональ байлығын бирҙе, опера-балет искусстваһының тормош менән бәйләнеше ныҡыуын билдәләне.

Рубинштейндең «Демон» постановкаһын (1879 йыл) һәм Чайковскийҙең «Евгений Онегин» постановкаһын (1881 йыл) ҡуйғандан һуң рус репертуары файҙаһына тамам боролош булды. Был спектаклдәр рус тамашасыһының киң танылыуын яулап алдылар.

Чайковский артынан Ҙур театрға композиторҙар плеядаһы — «Могучий кучка»ның ҡаҙаныштары килә. Мусоргскийҙең — «Борис Годунов» (1888 йыл). Римский-Корсаковтың «Снегурочка» — (1893 йыл) һәм «Рождество алдынан булған төн» (1898 йыл). Бородиндең «Князь Игорь» (1898 йыл) ҡуйылдылар.

Шулай итеп бөйөк рус композиторҙары — Глинканың, Даргомыжскийҙең, Серовтың, Чайковскийҙең, Мусоргскийҙең, Бородиндең, Римский-Корсаковтың ижадтары, был ижадтарҙы Ҙур театр сәхнәһендә күрһәтеү өсөн алдынғы общественностең һәм тамашасыларҙың демократик ҡатламының арыу-талыуҙы белмәйенсә көрәшеүе Ҙур театрҙың үҫешенә, уның данына һәм ижади уңышлыҡтарына нигеҙлек булып торҙо.

Рус музыкаһы бөйөк рус әҙәбиәтенең, ҡарашына ҡарата оппозицияла торған тәнҡит реализмы әҙәбиәтенең бер тыуған һеңлеһе ине. Рус опера драматургияһының иң яҡшы ижады өсөн тәү башлап Пушкин, Лермонтов, Гоголь, Островский әҫәрҙәренән, халыҡ эпосы әҫәрҙәренең тороуы юҡҡа ғына түгел ине.

Эшселәр хәрәкәтенең үҫеүе һәм царизмда штурмлауҙың үҫә барыуы общественностең үҙ-үҙен аңлауының яңы күтәрелешенә, культура сәхнәһенә халыҡ массаларынан сыҡҡан гүзәл талантарҙың күтәрелеүенә килтерҙе. Ҙур театр сәхнәһендә классик рус опералары һәм балеттарының гениаль образдарында рус вокаль һәм балет мәктәбенең гүзәл мастерҙарының бер нисә быуыны үҫеп сыҡты. Улар араһында күренекле йырсылар Шаляпин, Собинов, Нежданова, рус балетының мастерҙары Рославлева, Джури, Гельцер, Тихомиров, балетмейстер Горский иҫәпләнә. Үҙҙәренең ижадтары менән улар музыкаль сәхнә образдарының идеялылығын, геройҙарҙың психологияларына тәрән үтеп инеүҙе тыуҙырҙылар.

1905 йылғы революция еңелгәндән һуң башланған реакция Ҙур театрҙы ла ҡыҙғанманы. Гүзәл башҡарыусыларҙың плеядаһы барлыҡҡа килеүгә ҡарамаҫтан, уның опера һәм балет сәхнәләре идея-художество яғынан ҡатын ҡалыу кисерҙеләр. Модернизм, эстетство тенденциялары барлыҡҡа килә, айырыуса балет репертуары идеяһыҙ түбән художестволы әҫәрҙәр менән сүпләнде.

Бөтә рус культураһы кеүек Ҙур театрҙы ла Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы һаҡлап алып ҡалды. Театрға яңы талантар менән яңы тамашасы килде. Ҙур театрҙың ишектәре беренсе тапҡыр халыҡ өсөн ысындан да киң итеп асылдылар. Большевиктар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең иғтибары һәм хәстәрлеге арҡаһында театрҙың артабанғы художество үҫеше тәьмин ителде. Ул социализм иленең алдынғы опера һәм балет театры булыуы сифатында совет искусствоһында юғары һәм почетлы урын алды.

Революциянан һуңғы беренсе йылдарҙа уҡ Ҙур театр репертуары осраҡлы, идея һәм художество яғынан тулы ҡиммәте булмаған әҫәрҙәрҙән таҙартылды.

Иптәш Сталин Билль-Белоцерковскийға яҙған хатында ошондай бурысты ҡуйҙы: «...Иҫке һәм пролетар булмаған яңы макулатураны, уны алыштыра алырлыҡ, совет характерындағы ысын, ҡыҙыҡлы художество пьесаларын тыуҙырыу юлы менән, уның тартибенлә сәхнәнән аҙым һайын ҡыҫырыҡлап сығарырға» (И. В. Сталин, Әҫәрҙәр, 11 том, 328-се бит).

Был бурыс Ҙур театрҙың ижади стилен артабан үҫтереүҙе билдәләп, театр коллективы өсөн эш программаһы булып әүерелде. Классик репертуарҙы яңынса ҡуйып, Ҙур театр совет музыкаль драматургияһының алға китеүенә нигеҙ һалды. 1918 йылдан башлап ул совет композиторҙары тарафынан ижад ителгән 40-тан артыҡ опера һәм балет ҡуйҙы. Улар араһында Глиэрҙең «Ҡыҙыл мәк» балеты, Асафьевтың «Париж ялҡыны» һәм «Бахчисарай фонтаны» балеттары, Дзержинскийҙың «Тын Дон» операһы һәм башҡалар бар.

Театрҙың совет-музыкаль театр культураһын төҙөүҙәге уңышлы эше хөкүмәт тарафынан юғары баһаланды. Ҙур театр 1937 йылда Ленин ордены менән наградланды.

Беҙҙең Тыуған илебеҙгә гитлерсы баҫҡынсыларҙың һөжүм итеүе Ҙур театрҙың ижади тормошон туҡтата алманы. Ул һәр көн һайын Совет хөкүмәтенең һәм иптәш Сталиндең үҙенең бик ҙур хәстәрлеген һиҙеп, интенсив эшләүен дауам иттерҙе. Театрҙың артистәре фронт частарын хеҙмәтләнделәр, Совет армияһы менән берлектә уның Волганан алып Берлинға тиклем булған бөтә данлыҡлы юлын үтте. Еңеү көнөндә Ҙур театрҙың күренекле артистары Рейхстаг бинаһында булған бик ҙур концертта ҡатнаштылар.

В. Муралелиҙең «Бөйөк дуҫлыҡ» операһы тураһында» ВКП(б) Үҙәк Комитетының тарихи ҡарары Ҙур театрҙың ижади күтәрелешенә ҡеүәтле стимул булды. Был ҡарарҙа музыкала формалистик хаталарға тәрән тәнҡит бирелгән һәм совет музыкаль искусствоһын үҫтереүҙең асыҡ һәм маҡсатҡа йүнәлдерелгән программаһы билдәләнелде. Партияның ҡарары үҙенең мөмкинлектәрен тураһында гәзит буйынса килгән ҡарашты үҙгәртергә бурыслы итте һәм Ҙур театрҙың композиторҙар һәм драматургтар менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрен яңыса билдәләне. Ошо ҡарар сыҡҡандан һуң үткән өс йыл эсендә Ҙур театр классик рус һәм Көнбайыш-Европа репертуарын киңәйтеү буйынса ҙур эш үткәрҙе, ә совет опера һәм балет спектаклдәрен тыуҙырыу өлкәһендә театр, совет композиторҙары менән бергә, халыҡ алдында ҙур бурыслы булып тора әле.

Партияның хәстәрлеге, театр адресына ҡарата «Правда» газетаһы биттәрендә булған принципиаль тәнҡит театрға совет халҡының — коммунизм төҙөүсе халыҡтың көн яҡлы героик тормошон иҫкә алып опера һәм балет спектаклдәрен тыуҙырыуҙа ярҙам итә.

Ижади работниктар үҙ театрҙарына ғына бикләнеп йәшәмәйҙәр. Ҙур театрҙың йырсыларын, балет артистарын Донбасс һәм Кузбасс горняктары клубтарында, Урал һәм Ленинград заводтарында, илебеҙҙең күп кенә ҡалаларының опера театрҙары сәхнәләрендә, колхоз культура йорттары сәхнәләрендә күрергә мөмкин. Уның күренекле йырсылары инициативаһы менән коммунизмдың бөйөк төҙөлештәре коллективтары өсөн культура шефлығы башланды һәм йәйелдерелә.

Партия һәм хөкүмәттең, иптәш Сталиндең өҙлөкһөҙ хәстәрлеге арҡаһында Ҙур театр Советтар Союзының иң яҡшы театры булып әүерелде. Уның Сталин премиялары менән билдәләнгән 12 спектакле бар, уның 65 работнигенә Сталин премияһы лауреаттары исеме бирелде. Уның коллективында рус музыкаль сәхнәһе бөйөк корифейҙарының данлыҡлы традицияларын дауам иттереүсе һәм үҫтереүсе ҙур опера һәм балет мастерҙары бар. Ҡарт мастерҙар менән бер рәттән, талантлы йәштәр үҫә һәм күтәрелә.

Ҙур театрҙың музыкаль культураһы Советтар Союзының бөтә музыкаль театрҙары һәм халыҡ демократияһы илдәре театрҙары өсөн генә түгел, бәлки бик күп кенә ситт илдәрҙең музыкаль искусствоһының прогрессив деятелдәре өсөн дә өлгө булып хеҙмәт итә.

Ҙур театрҙың сәскә атыуы — совет искусствоһының тайпылышһыҙ күтәрелеүенең яҡты бер күренеше. Был күтәрелеш капиталистик илдәрҙә ҡыҙғаныс хәлдә йәшәгән опера-балет театрҙары фонында, уларҙағы искусствоның түшенкелеге һәм тарҡалыуы фонында айырыуса асыҡ күренә.

Ҙур театрҙың юбилейе бөтә совет культураһының байрамы булып тора. Был байрам совет музыкаль театрының бөтә работниктарын Сталин эпохаһына лайыҡлы булған опера һәм балет искусствоһының яңы күтәрелешенә рухландыра.

А. Анисимов.
РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле.

Һүрәттә: Мәскәү. ССР Союзы Ленин орденле Ҙур Академия Государство театры.
А. Батанов фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Республикабыҙ экономикаһының һәм культураһының артабан сәскә атыуы ө...

Башҡорт халҡының культура үҫеше тураһында сталинсе хәстәрлек

Советтар Союзының башҡа республикалары менән бер рәттән, бөйөк рус халҡының ярҙамында беҙҙең орденле Башҡортостаныбыҙҙың да экономикаһы, культураһы үҫә һәм алға китә. Республикабыҙҙың башҡалаһы Өфөлә СССР фәндәр Академияһы филиалы асылыуы Советтар Союзының башҡа халыҡтары менән бергә уҡ башҡорт халҡына ла фән һәм искусство өлкәһендә яңынан-яңы еңеүҙәргә эйә булырға һәм ижад итергә киң мөмкинлектәр аса.

Фәндәр Академияһының филиалы составында агробиология институтының асылыуы Башҡортостандың культура тормошонда ҙур ваҡиға булып тора. Быны мин, бәтәһенән әлек, Совет хөкүмәтенең, бөйөк Сталиндең башҡорт халҡының культураһын артабан үҫтереүҙә тиңдәше булмаған ҙур ҡайғыртыуы һәм хәстәрлек күреүе тип, ҡарайым.

Агробиология институты тәбиғәт ресурстарын, сиктән тыш бай һаналған Башҡортостандың тупраҡ һәм үҫемлек байлыҡтарын фәнни яҡтан тәрән итеп өйрәнеү нигеҙендә, республикабыҙҙың игенселек культураһын артабан күтәреү мәсьәләһе буйынса иң актуаль ...лар өҫтөндә эшләйәсәк. Фәнн... йәйелдереү республикабыҙҙың т... тән торған башҡорт кадрҙарын ... лә ныҡ ярҙам итәсәк. Һуң ... тутыуы бөтә секторҙары һәм ... лары үҙҙәренең ғилми-тикшер... рен иң прогрессив совет агро... учениеһе, был учениеға фәнни ... лыусылар Тимирязев, Вильямс, ... һәм Лысенконың өйрәтеүҙәре ... гәнә алып барасаҡтар. Бөтә ғилми... рәнеү эштәрен колхоз һәм совх... водствоһының бөгөнгө практик ... рын хәл итеүгә органик бәйле... алып барыу — институттың т... тоды булып торасаҡ.

Беҙ, ауыл хужалығы фән...ре һәм ғилми работниктәре, ... партияһының, Совет хөкүмәт... лично иптәш Сталиндең был ... тәренә яуап итеп, совет фә... культураһының артабан сәскә ... өсөн арымай-талмай хеҙмәт итәсә...

С. Н. Тай...
ауыл хужалығы фәндәре ...

Партияға һәм иптәш Сталингә рәхмәт

Өфө нефть институты коллективы 1951 йылда Өфө ҡалаһында СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороу тураһындағы ҡарарҙы большевиктар партияһына, Совет хөкүмәтенә һәм иптәш Сталиндең лично үҙенә ҙур рәхмәт белдереп ҡаршы алды.

Республикабыҙҙа бик ҙур яңы фәнни учреждениеның асылыуы Башҡортостан хеҙмәтсәндәре тормошонда мөһим ваҡиға булып тора. Ул хеҙмәтсәндәрҙең политик һәм культура кимәлен күтәреү тураһында көндәлек хәстәрлек күреүҙең асыҡ өлгөһө.

СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороу республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттары өсөн, бигерәк тә улар араһында иң йәш булған беҙҙең нефть институты өсөн ҙур әһәмиәтле. Беҙҙең институт Башҡортостанда һәм илебеҙҙең башҡа райондарында промышленносеңең артабан үҫеүенә ... дерелгән ҙур фәнни тикшереү эштәре бара. Шулай уҡ көндән-көн үҫә... нефть промышленносе өсөн юғары ... фикациялы кадрҙар-инженерҙар ... Институт коллективы был эштәр... лә яҡшыртыуҙа фәндәр Академ... Башҡортостан филиалы беҙгә ҙур ... итер тип ныҡлы ышана. Шуны ... бергә Өфө нефть институты ... республикабыҙҙың үҙәгендә был ... ни учреждениеға тейешле ... ярҙам күрһәтеү өсөн бөтә ... әҙер торғанлығын белдерә.

Р. Даут...
Өфө нефть институтының ... ойошмаһы секретаре.

Ленинсе-сталинсе милли политиканың тантанаһы

Коммунистар партияһы һәм лично иптәш Сталин совет фәненең артабан сәскә атыуына ҡарата ҙур хәстәрлек күрһәтәләр. Фәндәр корифейе И. В. Сталиндең гениаль хеҙмәттәре бөтә фәндәргә лә дөрөҫ йүнәлеш бирә һәм фән работниктарен бөйөк еңеүҙәргә рухландыра. Беҙ быны үҙебеҙҙең көндәлек практик эшебеҙҙә бик ныҡ тоябыҙ.

СССР Министрҙар Советының Өфөлә СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын асыу тураһындағы ҡарары ленинсе-сталинсе милли политиканың гүзәл ҡаҙаныштарын һәм партиябыҙҙың, хөкүмәтебеҙҙең фәнде үҫтереүгә булған хәстәрлегенең тантанаһы булып тора.

Әлек артта ҡалған һәм батша Россияһының яуым колонияһы булған Башҡортостан Совет власы йылдарында иң алдынғы республикаларҙың береһенә әйләнде. Халыҡ хужалығы бығаса тиклем күрелмәгән юғарылыҡҡа күтәрелде. Ауылдарыбыҙ һәм ҡалаларыбыҙ библиотека, клуб, мәктәп, техникум һәм ... йорттарының тығыҙ селтәре ме...ләнды. Хәҙер беҙҙең ... рыбыҙ, уҡытыусыларыбыҙ, ... беҙ, агрономдарыбыҙ, шулай уҡ ... гән ғалимдарыбыҙ, ғилми работник... һәм культура деятелдәребеҙ бар. ... та көстәрен һәм һәләтлектәрен ... сәндәребеҙҙең тормош шарттары... бан яҡшыртыуға арнайҙар.

Беҙҙә СССР фәндәр Академия... филиалы асылыуы ҙур һәм ... ҡиға булып тора. Был, әлбиттә, ... йөкмәткеһе яғынан социалистик ... маһы яғынан милли культурабыҙ... табан сәскә атыуына ...

Беҙ, ғилми работниктар, республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре менән бергә ... ҡыҫабыҙҙың һәм хөкүмәтебеҙ... ҡарата булған атайҙарса ... фән өлкәһендә яңы ҡаҙаныштар ... яуап бирәсәкбеҙ.

Р. Тәрегул...
филология фәндәре кандид...

Шатлыҡлы ваҡиға

ССР Союзы Министрҙар Советының Өфөлә тау-геология институты, агробиология институты, тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, химия һәм технология секторы һәм экономик тикшеренеүҙәр секторы составында СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороу тураһындағы ҡарарын республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре менән бер рәттән, Башҡортостан нефтселәре, нефть һәм геология өлкәһендә эшләүсе ғилми работниктар ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алдылар. Был тарихи хәбәр Ленин — Сталин партияһы милли политикаһының сәскә атыуы булып тора.

СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы һәм уның тау-геология институты беренсе нәүбәттә нефть ... гияһының ғилми проблемалары, ... технологияһы, нефть сығарыу һәм ... ашкартеу мәсьәләләре менән ... яңы нефть ятҡылыҡтарын асыуға ярҙам күрһәтәсәк.

Был филиал кадрҙар әҙерләү ... һе буйынса ла киң перспектива... Ул киләсәктә төп башҡорт ... ғилми работниктар әҙерләп сығар... ҙур өмөт тыуҙыра һәм республика... промышленносен, ауыл хужалығы... тураһын артабан үҫтереүҙә ҙур ... роль уйнаясаҡ.

Н. Тимерғ...
геология-минералогия фәндәре кандидаты.

Ауыл хужалығы институтында митинг

Башҡортостанда СССР фәндәр Академияһының филиалын ойоштороу тураһындағы СССР Министрҙар Советы ҡарарын, башҡорт ауыл хужалығы институты коллективы ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алды. Ошо ваҡиға айҡанлы институтта ҙур митинг булып үтте.

Митингала сығып һөйләүселәрҙән Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән деятеле биология фәндәре докторы профессор Богданов, марксизм-ленинизм фән ... сыһы Агеев һәм башҡа иптәштәр ... фәндәр Академияһы филиалының ре...ликабыҙҙа фән, культура һәм хал...жалығы мәсьәләләрен хәл итеүҙә ҙур ... уйнаясағын, шулай уҡ Башҡорт... ғалимдарының фәнни эштәренә ҙур ... итәсәге тураһында әйттеләр.

Митинг ҙур күтәренкелек менән ү...

А. Махмут...

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары буйынса

„Республиканың Верховный судында төп законды боҙоуға юл ҡуялар"

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 5 май номерында республикабыҙҙың ҡайһы бер суд органдарында Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 78-се статьяһын боҙоуға юл ҡуйылыуы тураһында хәбәр баҫылғайны. Ошо айҡанлы Башҡорт АССР-ы Верховный судының партбюро секретаре иптәш Шәмсетдинов редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

«Республиканың Верховный судында төп законды боҙоуға юл ҡуялар» тигән темала «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған тәнҡит материалы Башҡорт АССР-ы Верховный суды ... оператив кәңәшмәлә һәм партбюро ...рышында тикшерелде, унда күр... фактар бик урынлы тип табылды... бюро алдағы көндә закон менән ...ған принциптарҙы боҙоуға юл ҡу... һәм суд эштәрен Башҡорт АССР-ы ...тотуцияһының 78,79-сы статья... әйтелгәнсә үткәреүҙе тәьмин итерг... лективтағы бөтә коммунистарҙы ... иткән ҡарар ҡабул итте.

Яңы китаптар

Ошо көндәрҙә башҡорт телендә күп кенә яңы китаптар баҫылып сығып, китап магазиндарында һатыла башланы.

Пропагандиска ярҙамға № 4. Был журналда иптәш В. Терешкиндең «Тыныслыҡ өсөн көрәштә яңы этап» тигән мәҡәләһе һәм «СССР-ҙа синфи айырмаларҙы бөтөрөү тураһында» Т. Губаревтың мәҡәләһе урынлаштырылған.

М. Кәрим. «Беҙҙең өйҙөң йәме», хикәйә. Башгосиздат, балалар әҙәбиәте серияһынан. Яңыса, аҡ ҡағыҙҙа, эре хәрефтәр менән, матур итеп баҫылған. Күләме 52 бит, тиражы 4.000 дана, хаҡы 2 һум 70 тин.

Китап уҡыусылар конференцияһы

Салауат районы Лаҡлы ауыл библиотекаһы үҙ эшен яҡшы ойошторған. Уның 4 мең дананан артыҡ китабы һәм 350-нән артыҡ даими уҡыусыһы бар. Библиотека китап уҡыусыларҙы өлгөлә хеҙмәтләндереү менән бер рәттән, совет яҙыусыларының әҫәрҙәрен популярлаштырыу буйынса ла практик эш алып бара. Ошо көндәрҙә бында Н. Островскийҙың «Ҡорос нисек сыныҡты» тигән әҫәре буйынса китап уҡыусылар конференцияһы үткәрелде. Конференцияла был әҫәр буйынса уҡытыусыларҙан Ғирфанова, Зәйнуллин, Ялалов, колхозсы Хәмидуллин һәм башҡа иптәштәр сығыш яһанылар. Конференция бик йәнле, ҡыҙыҡлы үтте.

Библиотека яҡын көндәрҙә тағы ла китап уҡыусылар конференцияһы үткәреүгә әҙерлек алып бара.

И. Сафин.

Башҡорт АССР-ы колхоздарында баҫыу эштәре барышы

(План үтәлеше, 1951 йылдың 25 майына, проценттарҙа)

Тотҡан урыны, Райондар	Яҙғы культуралар сәселгән	Бөтә төр мал аҙыҡ культуралары сәселгән	Пар һөрелгән	Тотҡан урыны, Райондар	Яҙғы культуралар сәселгән	Бөтә төр мал аҙыҡ культуралары сәселгән	Пар һөрелгән
1. Хәйбулла	105,9	86	25	33. Бишбүләк	90,4	84	8
2. Баймаҡ	103,5	74	40	34. Мәләүез	90,3	73	12
3. Учалы	102,2	4	57	35. Воскресен	90,2	57	6
4. Әбйәлил	102	79	43	36. Әлшәй	90,2	86	31
5. Матрай	100,2	31	17	37. Белокатай	90,1	44	18
6. Абзан	99,5	57	11	38. Благовар	89,9	99	28
7. Стәрлетамаҡ	99	64	42	39. Баҡалы	89,5	112	34
8. Ҡыйғы	98,6	60	25	40. Йәрмәкәй	89,5	89	40
9. Зианчура	98,6	85	19	41. Федоровка	89	75	6
10. Бүздәк	98,3	77	61	42. Ҡәйәргәҙе	88,6	62	25
11. Белорет	97,5	30	34	43. Мәсетле	88,3	58	0,7
12. Бөрйән	97,1	71	—	44. Өфө	88,2	80	58
13. Йомағужа	96,9	130	51	45. Бәләкәй	87,9	74	29
14. Стәрлебаш	95,8	93	15	46. Дүртөйлө	87,9	60	53
15. Дәүләкән	95,8	90	49	47. Дыуан	87,6	65	16
16. Миәкә	95,8	86	13	48. Тәтешле	87,6	66	43
17. Салауат	95,4	47	11	49. Борай	87,4	74	23
18. Ҡандра	94,3	87	70	50. Ҡалтасы	87	70	28
19. Шишмә	94	83	39	51. Бөрө	86,8	63	53
20. Саҡмағош	93,9	93	23	52. Яңауыл	86,7	65	52
21. Балтач	93,8	68	36	53. Кушнаренко	86,6	56	11
22. Күгәрсен	93,2	50	23	54. Мишкә	85,9	68	39
23. Йылайыр	93	33	—	55. Нуриман	84,3	75	49
24. Туймазы	92,6	108	85	56. Краснокама	83,8	55	27
25. Ҡырмыҫҡалы	92,3	67	18	57. Покровка	81,5	58	17
26. Шаран	91,9	87	46	58. Благовещен	81,3	64	53
27. Ауырғазы	91,6	75	27	59. Иглин	79,8	67	47
28. Ғафури	91,2	54	37	60. Ҡариҙел	75,4	48	26
29. Маҡар	90,8	65	65	61. Байҡыбаш	75	67	43
30. Бәләбәй	90,7	83	40	62. Асҡын	74,7	79	38
31. Илеш	90,7	64	31	63. Оло Теләк	69,6	68	47
32. Архангель	90,4	75	18	64. Октябрьский ҡалаһы	76,9	180	—

* * *

Республикабыҙҙың күпселек райондары һәм колхоздары ҡара бойҙайҙан һәм йәшелсәнән башҡа яҙғы культуралар сәсеүҙе тамамланылар. Ләкин Асҡын, Байҡыбаш, Ҡариҙел, Оло Теләк райондарының партия һәм совет ойошмалары яҙғы культуралар сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн саралар күрмәйҙәр. [illegible]

Кушнаренко, Благовещен, Бөрө [illegible] районларында ҡартоф утыртыу бик әкрен темп менән бара. Был райондар планды ни бары 24—41 процентҡа ғына үтәгәндәр. Краснокама, Иглин, Салауат, Дыуан, Стәрлетамаҡ, Ҡәйәргәҙе һәм Ғафури райондары ошо көнгә тиклем малдар өсөн тамыр аҙыҡтар һәм силос культуралары сәсеүҙе тамамламағандар.

Уҙған биш көн эсендә Шаран районының МТС-тары һәм колхоздары пар һөрөү темпын байтаҡ күтәрҙеләр. Был биш көн эсендә район 30 процент үҫеш бирҙе. Ләкин күп кенә райондар пар һөрөүҙе ғәҙәттән тыш әкрен алып бара. Мәләүез, Салауат, Бишбүләк, Бөрө, Архангель, Стәрлебаш райондары пар һөрөү планын ни бары тик 8—23 процентҡа үтәп, һуңғы биш көндә 6—10 процент кенә үҫеш бирҙеләр.

Шул уҡ ваҡытта республикабыҙҙың күп кенә райондарында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе насар ойошторалар. Шишмә, Бүздәк, Архангель һәм башҡа МТС-тар [illegible] колхоздарҙа утау эштәре [illegible] комбайндар [illegible] МТС-тар [illegible].

Покровка, Архангель, Ерекле, Михайловка [illegible] комбайндар ремонтлау [illegible] МТС-тар [illegible] комбайндарҙы ремонтлау эштәре [illegible].

Район Советы исполкомдарының һәм ВКП(б) райкомдарының ауыл хужалығы бүлектәре һәм машина-трактор станцияларының бурысы хәҙер тиҙ арала [illegible] ойоштороу.

Депутаттар—социалистик ярышты ойоштороусылар

Һәр кемгә билдәле, хеҙмәт социалистик ярыш нигеҙендә ойошторолғанда дисциплина нығый, эш темпы күтәрелә. [illegible]

[illegible] арттырылған эйәртәләр. Мәҫәлән, Чурай ауыл Советы депутаттары — Ленин исемендәге колхоздың члендәре Апаев һәм Ҡотлоҙаев иптәштәрҙе генә алайыҡ. Улар — юл ремонтлау бригадаһы бригадирҙары. Иҫәүләп ярышалар. Тәүге көндө үк иптәш Апаев бригадаһы члендәре ваҡытты дөрөҫ һәм иҫәпле файҙаланыу, [illegible] ла социалистик ярыш йәйелдереп ебәрелде. Һөҙөмтәлә, колхоздар эш графигын систематик арттырып үтәүгә һәм эштең сифатын күтәреүгә өлгәшәләр.

С. Зәйнетдинов,

Мишкә районы, Чурай ауыл Советы председателе.

ПРОДУКЦИЯНЫҢ ҮҘЕНӘ ТӨШӨҮ ХАҠЫН КӘМЕТЕҮ ҺӘМ СИФАТЫН ЯҠШЫРТЫУ—БӨТӘ ПРЕДПРИЯТИЕЛӘРҘЕҢ НАМЫҪ ЭШЕ

Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн көрәштә

Продукцияның үҙенә төшөү хаҡы производствоның бик күп элементтәренән йыйыла. Юғары сифатлы һәм арзан продукция етештереү өсөн, бөтәһенән элек, оборудованиеларҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланырға, сырьены, материалдарҙы һәм ярым фабрикаттарҙы хужаларса, экономиялы тотонорға кәрәк.

Өфө телефон аппараттары заводы коллективы ошо мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн көрәшә лә. Көрәш һөҙөмтәләре яҡшы. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү заводҡа быйыл дүрт ай эсендә 384 мең һум файҙа һәм бер миллион ярым һум пландан тыш накопление алырға мөмкинлек бирҙе.

Продукцияның үҙенә төшөү хаҡы бөтә төр изделиелар буйынса ла кәметелде. Сырьеға, материалдарға, ярым фабрикаттарға экономия яһалды. Төп сырьё буйынса расход, үткән йылдың ошо ваҡыты менән сағыштырғанда, 11 процентҡа кәмене.

Был уңыштар, үҙ алдарына килмәне. Завод администрацияһы, партия ойошмаһы продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүгә йүнәлдерелгән күп кенә ойоштороу-техник сараларҙы үткәрҙеләр. Элек күп кенә материалдарға техник расчет нормалары юҡ ине. Бик ҡиммәтле булған ҡайһы бер материалдар, мәҫәлән, ҡорос табаҡтар техник нормаһыҙ тотола ине, был иһә ҡорос табаҡтың байтағын отходҡа сығарыуға алып килде. Хәҙер яңы операцион карта төҙәлде, штамповка машинаһы уйлап сығарылды. Ҡорос табаҡтың элек отходҡа сыға торған өлөшөнән хәҙер ваҡ деталдәр эшләнә. Был сара бик күп сырьеға экономия яһарға мөмкинлек бирҙе. Меңдәрсә ҡорос табаҡҡа экономия яһалды.

Сырьены, материалдарҙы һаҡлыҡ менән тотоноу нормалары һәр бер эшсегә еткерелде. Цехтарҙа һәр бер эшсенең лицевой счеты булдырылды. Унда тотолған материалдың һәм яһалған экономияның иҫәбе яҙыла.

Төп цехтарҙың хужалыҡ иҫәбенә күсерелеүе сырьены тотоуҙы байтаҡ яҡшыртты. Был сара шулай уҡ оборудованиены тулыраҡ файҙаланыуға, ағыулыҡты экономиялы тотонорға мөмкинлек бирҙе. Бөтә цехтар ҙа үҙҙәренең экономик-техник күрһәткестәрен күтәреү өсөн көрәш алып баралар. Ай үткәс, цехтарҙың хужалыҡ эшмәкәрлектәре заводтың баланс комиссияһында тикшерелә.

Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙә рационализаторҙарҙың да роле ҙур. Хәҙер төп цехтарҙа 186 рационализаторлыҡ тәҡдимдәр яһалды. Эшсе иптәш Ғәйнуллин ҡырҡы һымаҡ ҡайсыларҙың ҡеүәтен һәм иптәш Копаев пресс ползундарының әйләнеш тиҙлеген арттырыуға йүнәлдерелгән тәҡдимдәр индерҙеләр. Уларҙың тәҡдимдәре ҙур ғына суммаға экономия бирәләр.

Заводтың отлично сифатлы продукция етештереүсе цехтары һәм бригадалары арта бара. Улар араһында иптәш Львова етәкселек иткән монтажниктәр бригадаһы, иптәш Моратовтың шуровщиктәр бригадаһы, иптәш Гаприндашвилиның штамповщиктәр бригадаһы бар. Күпменекле автоматчик Мафтахов, прессовщик Зиновьев, пульверизатор Мәхәмәдиева иптәштәр күптәргә өлгө булырлыҡ. Улар юғары сифатлы продукция етештереү менән бергә, ай һайын 10—15 процент ҡиммәтле материалдарға экономия яһайҙар. Бындай кешеләр телефон аппараттары заводы коллективы араһында хәҙер күптәр.

Б. Ишдәүләтов.

Тағы ла яҡшыраҡ эшләйәсәкбеҙ

Айҙың һуңғы көндәре. Был көндәрҙә фабрика директоры Сиразиев һәм партбюро секретары Седых иптәштәрҙең кабинетында айырыуса тығыҙ. Директор ҙа, партбюро секретары ла цех начальниктәрен һәм мастерҙарҙы үҙҙәренә ҡабул итәләр. Цехтарҙың һәм бригадаларҙың производство программаларын срогынан алда тамамлауҙары тураһында рапорт тыңланды. Һәр мастер һәм цех начальнигы үҙ коллективының хеҙмәт уңыштарын тиҙерәк илтеп еткерергә килде.

Бына мастер Степанова. Ул производство программаһының срогынан алда үтәлеүе һәм пландан тыш 270 берәмек продукция етештерелеүе тураһында директорға рапорт бирҙе. Нәш мастерҙың докладын ҡыҫҡа һәм аңлайышлы. Ул үҙенең эстәлегендә бик күп нәмәләр — Тыуған илебеҙҙең артабанғы сәскә атыуы һәм коммунизм төҙөү өсөн коллективтың фиҙакәр хеҙмәте тураһында һөйләй ине.

Директор мастерҙы ҙур иғтибар менән тыңланы ла, уның ҡулын ҡыҫты һәм хеҙмәт еңеүе менән ҡотланы. Һуңынан ул:

— Рахмәт, иптәш Степанова, киләсәктә лә Тыуған илебеҙ, халыҡ өсөн фиҙакәр хеҙмәттә уңыш теләйем, — тине.

Ысынлап та, һуңғы көндәрҙә Өфө 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһында айырыуса ҙур хеҙмәт күтәрелеше йәшәй. Коллектив апрель айы планын 110 процентҡа үтәне һәм пландан тыш 940 мең һумлыҡ продукция бирҙе. Е. А. Флакс һәм Е. Ф. Викторова иптәштәр етәкселек иткән цех коллективтарының план үтәлеше апрель айында 109—113 процент тәшкил итте. Был цехта юғары сифатлы продукция етештереү өсөн хәрәкәт хәҙер көндән-көн киңерәк ҡолас ала бара. Г. Т. Першин, Н. Н. Федорова, Ф. М. Басирова һәм Л. М. Шейхместер иптәштәрҙең цехтарында ҙур уңыштар бар. Социалистик ярыш бында тағы ла ҙурыраҡ төҫ ала бара. Садретдинова, Чугунова, Мөхәмәтъянова, Әхмәтова һәм башҡа күп иптәштәр үҙ нормаларын 140 — 170 процентҡа үтәйҙәр һәм тик отлично сифатлы продукция ғына етештерәләр. Бындай алдынғы стахановсылар көндән-көн арта бара.

Цехтарҙа, бригадаларҙа һәм агрегаттарҙа юғары хеҙмәт күрһәткестәренә өлгәшеүҙә коммунистар һәм комсомолецтар алдынғы сафта. Партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының төп эш методы булып стахановсыларҙың эштәрен популярлаштырыу һәм артта ҡалыусыларҙы алдынғылар сафына сығарыу тора.

Коллективтың, партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының төп бурысы — өлгәшкән уңыштарҙа ғына туҡтап ҡалмау, ә 1951 йылдың государство программаһын срогынан алда тамамлау өсөн энергияны тағы ла күберәк мобилизовать итеү. Был бурысты ла фабрика коллективы намыҫ менән уңышлы үтәп сығыр.

Н. Шаматов,

8 Март исемендәге тегеү фабрикаһының хеҙмәт һәм хеҙмәт хаҡы бүлеге инженеры.

Цех коллективының уңыштары

Беҙҙең цех коллективы, социалистик йөкләмәһен намыҫ менән үтәү өсөн көрәшеп, техник-экономик күрһәткестәрҙе яҡшыртыуҙа байтаҡ уңыштарға өлгәште.

Ошо йылдың дүрт айлыҡ производство планы үтәлеше 101,6 процент тәшкил итте. Нефтте эшкәртеү өсөн әҙерләүҙең сифаты, үҙған йылдың беренсе кварталына ҡарағанда, бик күп яҡшырҙы. Начальнигы иптәш Игошин булған комсомолец-йәштәр установкаһы коллективы, апрель айының производство планын 107,5 процентҡа үтәп, социалистик ярышта завод буйынса беренсе урынды яулап алды. Боярченко, Тюрин, Кузнецова һәм Мәкрушина иптәштәр етәкселек иткән технологик бригадалар ҙа пландарын айҙан-айға арттырып үтәйҙәр.

Продукция етештереүҙә үҫтереү менән бергә беҙ материалдарға, сырьеға, парға һәм электр энергияһына экономия яһауҙа ла ҙур уңыштарға өлгәштек. Дүрт ай эсендә беҙ экономик күрһәткестәрҙе яҡшыртыуҙан заводҡа 200 мең һумдан артығыраҡ файҙа бирҙек. Был осорҙа цех буйынса парға 17 мең һумлыҡ, реагенттарға 67 мең, электр энергияһына 20 мең һумлыҡ экономия яһалды.

Был уңыштарҙың сере нәмәлә һуң? Уларҙың сере: эшселәрҙең сифат күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн большевистик көрәште ойоштороуында, был көрәштә үҙҙәренең техник һәм политик белемдәрен күтәреү өстөндә арымай-талмай эшләүҙәрендә.

Беҙҙең цехта 50-гә яҡын эшсе, производствонан айырылмайынса, төрлө формалағы уҡыуҙар менән солғанып алынған. Апрель айында ғына 14 кеше, техминимум түңәрәктәрендә уҡып, үҙҙәренең разрядтәрен арттырҙылар. Цех эшселәренән ос кеше нефтселәрҙең киске техникумында, ун кеше эшсе йәштәренең киске мәктәбендә уҡый. Һыҡышмалы уҡыу уларҙың техник һәм политик аңлылыҡтарын арттыра. Һөҙөмтәлә улар хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, экономик күрһәткестәрҙе яҡшыртыуға йүнәлдерелгән техник проблемаларҙы хәл итеүҙә ҡыйыу ҡатнашалар. Социалистик аң менән һуғарылған ижади фекерҙәр производство уңыштарын арттырыуға мөмкинлек бирәләр. Мәҫәлән, апрель айында ғына цех эшселәре 13 рационализаторлыҡ тәҡдим яһанылар. Уларҙың 9-ы тормошҡа ашырылды ла инде. Оборудованиеларға общественный смотр айлығы эсендә эшселәр тарафынан установкаларҙың, агрегаттарҙың һәм аппаратураларҙың ҡеүәтен тулыраҡ файҙаланыуға һәм уларҙың эштәрен яҡшыртыуға йүнәлтелгән 21 рационализаторлыҡ тәҡдим индерелде. Уларҙың 15-ен тормошҡа ашырыу продукция етештереүҙе арттырыуҙа һәм сифат күрһәткестәрен яҡшыртыуҙа ҙур ярҙам итте.

Беҙҙең уңыштарыбыҙҙың сере бына шунда ла. Цех коллективы хәҙер был уңыштарҙы тағы ла арттырыу өсөн көрәшә.

А. Заһиров,

Өфө нефть эшкәртеү заводының «Отлично сифат» цехы начальнигы.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 25 май. (ТАСС). Корея халыҡ демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе, 25 майҙа, фронттың айырым участкаларында Халыҡ армияһының частәре, Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Америка-Англия интервенттәре ғәскәрҙәренең контратакаларын кире ҡаҡтылар, тип хәбәр итте.

25 майҙа Халыҡ армияһының частәре дошмандың 5 самолетын атып төшөрҙөләр.

СССР-ҙың БМО эргәһендәге вәкиллегенең БМО секретариатына хаты

НЬЮ-ЙОРК, 25 май. (ТАСС). 23 майҙа СССР-ҙың БМО эргәһендәге вәкиллеге Генеральный Ассамблеяның 1951 йылдың 18 майҙағы резолюцияһының тексын СССР Хөкүмәте иғтибарына еткереүҙе һорап БМО секретариатының 1951 йылдың 21 майҙа ебәргән телеграммаһы айҡанлы уға хат ебәрҙе. Хатта былай тип әйтелә: «Советтар Союзы делегацияһы Беренсе комитетта һәм Генеральный Ассамблеяның пленумында белдергәнсә, АҠШ һәм БМО-лағы агрессорлыҡ блогының тырышлығы менән ҡабул ителгән күрһәтелгән резолюцияның законһыҙлығы айҡанлы, вәкиллек был законһыҙ һәм БМО Уставына ҡапма-ҡаршы тороусы резолюцияны СССР Хөкүмәте иғтибарына еткереүҙе кәрәкһеҙ, тип иҫәпләй.

Юғарыла хәтергә төшөрөлгән телеграмманы әйтелгән ошо нигеҙҙәр буйынса кире ҡайтарып, СССР-ҙың БМО эргәһендәге вәкиллеге БМО секретариатынан был хатты Генеральный Ассамблеяның документы сифатында иғлан итеүҙе һорай».

Көньяҡ-көнбайыш Ҡытайҙа яңы тимер юлын төҙөү

ПЕКИН, 25 май. (ТАСС). Сычуань провинцияһының таулы райондарында Чунцин менән Чэнду ҡалалары араһында 530 километр оҙонлоғонда тимер юлы төҙөлә. Көньяҡ-көнбайыш Ҡытайҙың тәбиғи ресурстарға бай булған һәм ауыл хужалығы райондарын илдең башҡа райондары менән бәйләүсе яңы тимер юлы ҙур халыҡ хужалығы әһәмиәтенә эйә буласаҡ.

Синьхуа агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Чунциндан алып Цзянцзинға тиклем 125 километр оҙонлоғондағы тимер юлы участкаһын төҙөү тулыһынса тамамланған һәм ул эксплуатацияға тапшырылған да инде.

Төҙөлештә 100 мең эшсе эшләй. Яңы тимер юлы үткән райондарҙың халҡы уларға актив ярҙам күрһәтә.

Болгарияла совет фильмдәре фестивале

СОФИЯ, 25 май. (ТАСС). Бөйөк рус полководецтәренә арналған совет фильмдәренең фестивале бөтә Болгарияла ҙур уңыш менән үтә. София, Сталин, Пловдив, Димитровград, Благоевград һәм башҡа ҡалаларҙың халҡы «Александр Невский», «Суворов», «Кутузов», «Минин һәм Пожарский» һәм башҡа кинокартиналарҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарайҙар.

Фестивалдең 4 көнө эсендә башҡала кинотеатрҙарында бер нисә тиҫтәләгән мең кеше булды. Бөйөк рус полководецтәренә арналған гүзәл совет фильмдәре тураһында тамашасылар рухланып һөйләйҙәр.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

СӘСЕҮЛЕКТӘРҘЕ ХИМИК ЫСУЛ МЕНӘН УТАУ

Агроном Н. Возженников

Сәсеүлектәрҙәге ҡый үләндәрен ҡул менән утау бик күп көс талап итә. Был эште еңеләйтеү, осһоҙлаштырыу һәм унан артыҡ файҙалы һөҙөмтәләр алыу маҡсатында, беҙҙең совет ғалимдәре һәм практик работниктәребеҙ утау эшен хеҙмәт етештереүсәнлеген арттыра торған химик ысул менән алыштырыуға күптән үк ынтылғайнылар.

Беҙҙә совет химия фәне ҙур ҡаҙаныштарға өлгәште. Һөҙөмтәлә ҡайһы бер органик матдәләрҙән торған химик препараттарҙы ҡый үләндәре менән көрәшеүгә файҙаланыу мөмкинлеге иҫбат ителде. Был препараттар араһында сәсеүлектәрҙәге ҡый үләндәре менән көрәштә бигерәк тә файҙалы йоғонто яһай торғандары булып түбәндәге органик иретмәләр иҫәпләнә: 2,4 дихлорфеноксиси уксус кислотаһы (2,4—ДУ) һәм 2-метил 4 хлорфенокси уксус кислотаһы (2М—4Х).

Был химик нәмәләрҙең һөйләнгес сифаты шунан тора: улар үҫемлектәргә һайланма юл менән тәьҫир итәләр. 2,4—ДУ һәм 2М—4Х препараттары билдәләнгән тупланышта (концентрацияла) бер өлөшлө (однодольных) үҫемлектәрҙең йәшәү функцияларына зарар килтермәйенсә ике өлөшлө (двухдольных) үҫемлектәрҙе ҡоротолар. Башаҡлы культуралары башаҡлы булмаған ҡый үләндәренән химик ысул менән утау эшен нигеҙләргә уларҙы ҡулланыу бына шуларға нигеҙләнгән.

Башаҡлы үҫемлектәрҙе 2,4—ДУ һәм 2М—4Х иретмәләре менән бөркөгәндә ике өлөшлө (двухдольные) үҫемлектәр тиҙ ҡороғәйҙәр.

Ҙур майҙандарҙа бер нисә йыл үткәрелгән производство тәжрибәләре 2,4—ДУ һәм 2М—4Х иретмәләре менән сәсеүлектәрҙе бөркөү ҡул менән утау эшен тулыһынса алмаштырыу мөмкинлеген күрһәтте, утауҙы үткәреүгә хеҙмәт һәм средство сарыштырмаслыҡ аҙ күләмдә талап ителде.

Башаҡлы булмаған бер йыллыҡ, шулай уҡ күп йыллыҡ ҡый үләндәренең күпселеге 2,4—ДУ һәм 2М—4Х препараттары менән ҡоротола, ә «ныҡыраҡ» булған ҡый үләндәренең үҫеше шул тиклем боҙола, улар практик алғанда ашлыҡтар өсөн ҡурҡыныслы булып иҫәпләнмәйҙәр. Һаҡланып ҡалған ҡый үләндәре күп ваҡытта яңынан үрсеү өсөн үҙҙәренең һәләтлектәрен юғалталар.

2,4—ДУ һәм 2М—4Х препараттарының бик аҙ һибелгән иретмәләр дозаһы (нормаһы) ҡайһы бер ваҡыттарҙа үҫеүҙе тиҙләтеүгә стимул булып торалар. Бер гектарға был препараттарҙы 100 грамдан бер килограмға тиклем үк итеп арттырыбыраҡ бөркөгәндә, ул препараттар үҫемлектәргә һибелгән хәлдә, үҫемлектең ҡапша системаһына үтеп инәләр һәм физиологик процесстарын боҙалар. Шул арҡала үҫемлек үҫеүҙән туҡтай, япраҡтар һәм һабаҡтар шиңә, әкренләп ҡорой башлай. 2,4—ДУ һәм 2М—4Х иретмәләренең ҡый үләндәренә бындай хәрәкәте эшкәртеүҙән һуң бер нисә сәғәт үҙгәс башлана. Артабан үҫемлектәрҙең зарарланыуы физиологик күренеш булып үҫешләнә һәм был, зарарланыу, тыштан ҡарағанда, вирус ауырыуына оҡшай. Япраҡтарҙың һәм ҡапшаларҙың бер нindәй ҙә ҡайҙәрләнеш билдәләре булмай. Ҡый үләндәре 2-3 аҙнанан һуң ҡорой башлай.

Препараттар үҫемлектәрҙең өҫкә еңел генә һеңеп, үҫемлектә ҡапша эсе системаһында хәрәкәт итеп, уларҙы боҙа башлайҙар. Үҫемлектең ер өҫтөндәге өлөшөн генә түгел, бәлки ер аҫтына тәрән төшөп тамырҙы ҡоротолар. Мәҫәлән, билсәндең тамыр системаһы тарҡала һәм 60 сантиметр һәм унан да тәрәнерәк тамыр өлөшө ҡорой.

Препараттар бигерәк тә кәтеүсе сумаҙаһы, алабута, ярут, горчица, аҡ марь һәм башҡа бер йыллыҡ һәм күп йыллыҡ үҫемлектәргә ныҡ йоғонто яһайҙар. Был ҡыйҙарҙы юҡ итеү өсөн бер гектарға 0,5—0,75, йәки 0,25 килограмм препарат етә.

Практик алғанда, бер гектарға 0,75—1 килограмм препарат ҡулланғанда тилә шалҡан, лютик, ҡандала үләне, аксирис, подмаренник, пикульник, күк сәскә, һары билсән, ҡаты билсән, баҡса билсәне, будяк, ҡырағай тары һәм ошо семьялағы башҡа үҫемлектәр бөтөнләй ҡоройҙар.

Был препараттар йоғонтоһона бик тиҙ бирешмәй торған ҡый үләндәре: бесәй ҡойроғо, бабарин, салмабаш һәм башҡалар. Бындай ҡыйҙар менән көрәшеү өсөн бер гектарға 1,5 килограмға тиклем препарат талап ителә.

Был препараттар ҡый үҫемлектәренең күп кенә төрҙәре йәш ваҡытында, шытып сыҡҡандан һуң башлап сәскә атҡанға тиклем ҡулланылғанда көслөрәк йоғонто яһайҙар. Сәскә ата башлаған осорҙа эшкәртелгән ҡый үләндәре орлоҡ бирмәйҙәр. Бөркөү эшо үҫемлектәрҙең үҫеүенә ҡарата ни тиклем иртәрәк башҡарылһа, препаратты файҙаланыу дозаһы шул тиклем аҙыраҡ булырға тейеш. Сәсеүлектәрҙе бөркөү эшен үҫемлектәрҙең ҡуҙаҡланыу фазаһы уртаһына йәки башаҡлы культуралар һабаҡҡа сығыу ваҡытына тура килтереп башҡарырға кәрәк. Бөркөү эшен үҫемлектәр ҡыуыҡланыуға тиклем йәки башаҡлана башлауҙан һуң үткәрергә ярамай. Сөнки был хәлдә игенгә зарар килеүе мөмкин. Промышленность 2,4—ДУ һәм 2М—4Х препараттарын натрий тоҙҙары төҫөндә сығара. Препараттар һоро, һарыраҡ йәки аһыу порошоктарға оҡшашлы була. 2,4—ДУ һәм 2М—4Х техник натрий тоҙҙары 60-тан 90 процентҡа тиклем таҙа препарат тәшкил итәләр.

2,4—ДУ һәм 2М—4Х препараттары менән сәсеүлектәрҙе эшкәртеү һыу иретмәһе менән башҡарыла. Был препараттар кешеләр һәм хайуандар өсөн ағыулы түгел, бал ҡорттарын зарарламай, өҫ, аяҡ кейемдәрен һәм аппаратураны боҙмай һәм уттан хәүефле түгел. Уларҙың өҫә ауыр булғанлыҡтан аҙыҡ-түлектән һәм мал аҙығынан айырым урында һаҡларға кәрәк. 2,4—ДУ һәм 2М—4Х натрий тоҙҙарын малдар, бигерәк тә суҡҡалар яратып ашауҙан булалар, был тәңгәлдә бер нindәй ҙә ауырыу һиҙелмәй, ләкин был суҡҡаларҙың итә насар еҫле булғанлыҡтан ашарға ярамаҫ була. Был натрий тоҙҙары һыуҙа яҡшы ирей.

Иретмәне әҙерләү алдынан препараттың файҙаланыу нормаһы — дозаһы ҡуйыла. Был доза ҡый үләндәренең ниндәй төрө күберәк булыуын, уларҙың үҫеү фазаһын, игендәрҙең торошона ҡарап билдәләнә. Ғәҙәттә, бер гектарға 0,50-нән 1,5 килограмға тиклем таҙа препарат ҡулланыла. Дозаһын билдәләгәндән һуңында препарат һыуҙа иретелә.

Бер гектарға тейешле доза препаратты иретеп шыйыҡса яһау өсөн һыуҙың күпме кәрәклеген белеү файҙаланыла торған аппараттың һәм бөркөү эшен башҡарыусы наконечниктәрҙең ниндәй типта булыуына бәйләнгән. Ер өҫтөндә бөркөү үткәргән ваҡытта ғәҙәттәге наконечниктәр булғанда 500 литрға тиклем һәм экономиялы наконечниктәр эшләгән ваҡытта 150—200 литр һыу файҙаланыла.

Бөркөү эшен көн буйы үткәрергә мөмкин. 18—20 градус йылылыҡтағы ҡояшлы көндә бөркөү үткәреү яҡшы була. Сәсеүлектәрҙе эшкәртеү осоронда көндәң йылылығы 15 градус һәм унан да түбән булһа үлән үҫемлектәренең бөтә төрҙәренә лә гербицидтәрҙең тәьҫир итеүҙәренә байтаҡ тотҡарлыҡ яһала.

Бөркөүҙән һуң артыуы арҡаһында (бөркөү үткәргәнгә тиклем йәки унан бер тәүлек һуң ямғыр яуһа) һауа температураһы 15 градустан кәмемәһә препараттарҙың ҡеүәте тағы ла көслөрәк була.

Химик эшкәртеү өсөн бигерәк тә ҡуҙаҡһыҙ булған ҡый үләндәре менән күберәк сүпләнгән бойҙай, арпа, һоло, тары сәсеүлектәрен һайлап алырға кәрәк. Клевер һәм люцерна менән бергә сәселгән культураларҙы гербицид менән эшкәртергә ярамай, сөнки клевер, люцерна үләндәренә 2,4—ДУ һәм 2М—4Х бик ныҡ тәьҫир итәсәк.

Шуны күҙ алдында тоторға кәрәк, гербицид ул ике өлөшлө (двухдольных) класстарҙан булған ҡый үҫемлектәре өсөн генә көслө ағыу түгел, бәлки ике өлөшлө (двухдольных) культуралы үҫемлектәр өсөн дә ағыулы. Шәкәр сөгөлдәре, йәшелсә культуралары, көнбағыш һәм башҡалар, шулай уҡ ағас төрҙәре был препараттар йоғонтоһон бик ныҡ һиҙәләр. Шуны ныҡ хәтерҙә тоторға кәрәк, 2,4—ДУ һәм 2М—4Х препараттарын химик ағыулау өсөн утауҙа бары тик башаҡлы игендәр сәсеүлегендә генә ҡулланырға мөмкин.

Был препараттар бөртөклө ашлыҡ культуралары араһында ҡойолоп үҫә торған көнбағышты бөтөрөү өсөн дә яҡшы файҙа бирәсәктәр. Тәжрибә шуны күрһәтә, гектарға 0,5-тән 1 килограмға тиклем доза булғанда бөртөклө культуралар сәсеүлеген көнбағыштан бөтөнләй таҙартырға була.

Бөркөү үткәргәндән һуңында ҡалған ҡый үләндәрен ҡул менән утағанда орлоҡ участкаларын тулыһынса таҙартырға мөмкин. Ләкин шуны әйтергә кәрәк, химик нәмәләр менән ҡый үләндәрен бөтөрөү төп средство итеп ҡарау дөрөҫ булмаҫ ине.

Ҡый үләндәре менән көрәштә төп средство булып, алдынғы агротехника алымдары, үлән баҫыулы сәсеү әйләнеше иҫәпләнә. Ошолар менән бергә бәйләп алып барғанда ғына, өҫтәмә көрәш булараҡ, химик препараттар баҫыуҙарҙа ҡый үләндәрен тиҙерәк һәм бөтөнләй бөтөрөргә мөмкинлек бирәсәк.

Башҡорт АССР-ы баҫыуҙарында 2,4—ДУ һәм 2М—4Х препараттары ҙур күләмдәрҙә ҡулланылмай әле. Колхоздарҙа дөйөм сәсеүлектәрҙең сүпле булыуын иҫәпкә алғанда, быйыл препараттарҙы ҡулланыу баҫыуҙарҙы ҡый үләндәренән таҙартыу һәм юғары урожай алыу өсөн ҙур мөмкинлектәр бирәсәк.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

Укырға кайҙа барырға

ӨФӨ НЕФТЬ ИНСТИТУТЫ

1951—1952 укыу йылына түбәндәге факультеттәргә студенттәр кабул итә:

1. Тау-нефть факультете: нефть һәм газ яткылыктарын эшкәртеү специальностаре буйынса.
2. Технология факультете: нефть һәм газ эшкәртеү технологияһы буйынса.
3. Нефть-механика факультете: нефть һәм газды ташыу һәм һаклау специальносе буйынса.

Институтта укыу срогы 5,5 йыл.

Институт нефть һәм газ яткылыктарын эшкәртеү буйынса тау инженерҙарен; нефть һәм газ эшкәртеү өсөн инженерҙәр-технологтар; нефтте, газды һәм уларҙың продукттарын ташыу һәм һаклау буйынса инженерҙәр-механиктар әҙерләй.

Ғаризалар 31 июлгә тиклем алына, һынауҙар 1 августан 20 августка тиклем үткәрелә.

Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Институтка инеүселәр түбәндәге фәндәрҙән һынауҙар бирәләр: рус теле һәм әҙәбиәте (яҙма һәм телдән), математика (яҙма һәм телдән), физика, химия һәм сит ил теленән.

Институттың 1-се курсының көндөҙгө бүлегенә кабул ителеүселәрҙең бөтәһе лә 395 һум күләменә стипендия менән тәьмин ителә; отличниктәргә 25 процент күләмендә өстәмә стипендия бирелә. Ситтән килгән укыусылар дөйөм торлак менән тәьмин ителә.

Институттың производствонан айырылмайынса укыу өсөн киске бүлеге бар. Ул нефть һәм газ яткылыктарын эшкәртеү, нефть һәм газ технологияһы буйынса специалистар әҙерләй.

Ғаризалар, түбәндәге документтәрҙе теркәп, директор исеменә бирелә: аттестат (подлинниктә), автобиография, 3 фотокарточка.

Киске бүлеккә кабул ителеүселәр, күрһәтелгән документтәрҙән тыш, эшләгән урындарынан справка килтерергә тейештәр.

Адрес: БАССР, Черниковск калаһы, Ленин урамы, 45-се номерле йорт. Телефон 3-13-32.

Дирекция.

ВЛКСМ-дың 15 ЙЫЛЛЫҒЫ ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТ

МЕДИЦИНА ИНСТИТУТЫ

1951—1952 укыу йылына беренсе курска укыусылар кабул итә.



Институт дауалаусы врачтар әҙерләй.

Институтка кабул ителеүселәр түбәндәге фәндәрҙән һынауҙар бирәләр: Физика, химия, рус теле (телдән һәм яҙма) һәм әҙәбиәте.

Ғаризалар 1951 йылдың 31 июленә тиклем кабул ителә.

Кабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августка тиклем үткәрелә.

Институтка укырға кабул итеү тураһындағы ғаризалар түбәндәге документтәрҙе теркәп тапшырыла: автобиография, урта мәктәпте тамамлау тураһында аттестат (подлинникта) һәм 3 фотокарточка.

Адрес: Өфө калаһы, Ленин урамы, 1-се номерле йорт. Телефон 2-79-90.

Дирекция.

К. А. ТИМИРЯЗЕВ ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТ ГОСУДАРСТВО

ПЕДАГОГИЯ ИНСТИТУТЫ

1951—1952 укыу йылына студенттәр кабул итә.

Институт урта мәктәптәр өсөн укытыусылар әҙерләй.

Педагогия институтына урта мәктәпте тамамлаған һәм билдәләнгән һынауҙарҙы уңышлы тапшырған 17 йәштән 35 йәшкә тиклем һәр ике енес граждандары кабул ителә. Урта мәктәпте алтын һәм көмөш медалдәр менән тамамлаған граждандар һынауһыҙ кабул ителә.

Укыусылар түбәндәге факультеттәргә кабул ителә: физика һәм математика (физика һәм математика бүлектәре), тел һәм әҙәбиәт (рус мәктәптәре өсөн рус теле һәм әҙәбиәте бүлеге, башкорт мәктәптәре өсөн рус теле һәм әҙәбиәте, татар мәктәптәре өсөн рус теле һәм әҙәбиәте, башкорт теле һәм әҙәбиәте, татар теле һәм әҙәбиәте бүлектәре), тарих, тәбиғәт, география, сит ил телдәре (инглиз һәм немец теле бүлектәре).

Педагогия институтына инеүселәр, специальностәргә һәм факультеттәргә карап, түбәндәге фәндәрҙән һынауҙар бирәләр: физика-математика факультетенә инеүселәр: математика, физика, химия, рус теле һәм әҙәбиәте буйынса; тел һәм әҙәбиәт, сит ил телдәре факультеттәренә инеүселәр: рус теле һәм әҙәбиәте, СССР тарихе, география, сит ил телдәренең береһе буйынса (инглиз, француз йәки немец теле), ә башкорт һәм татар теле бүлектәренә инеүселәр әсә теленән һәм әҙәбиәтенән һынауҙар бирәләр; тәбиғәтте өйрәнеү факультетенә инеүселәр: физика, химия, рус теле һәм әҙәбиәте буйынса; тарих һәм география факультеттәренә инеүселәр: СССР тарихе, география, рус теле һәм әҙәбиәте буйынса.

Укырға кабул итеү тураһындағы ғаризалар 20 июндән 31 июлгә тиклем кабул ителә. Ғариза биреүсе үҙенең ниндәй факультеткә йәки бүлеккә инергә теләүен ғаризала күрһәтергә тейеш. Ғаризалар директор исеменә яҙыла һәм түбәндәге документтәр менән бергә тапшырыла: автобиография, урта укыу йортон тамамлау тураһында аттестат (подлинникта), 3×4 сантиметрлы өс фотокарточка, хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте тураһында справка (хәрби учетта тороусылар өсөн). Паспортты укырға инеүсе үҙе менән бергә алып килә.

Кабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августка тиклем үткәрелә. Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Алтын һәм көмөш медалдәр менән кабул ителеүселәр һәм һынауҙарҙы „якшы" һәм „отлично" билдәләренә тапшырыусылар стипендия менән тәьмин ителәләр.

Адрес: Өфө калаһы, Гоголь урамы, 11-се номерле йорт. Телефон номерҙәре: 2-63-70, 2-63-90.

Дирекция.

ӨФӨ ЭЛЕКТРОМЕХАНИКА ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 укыу йылына

техникумдың түбәндәге бүлектәренә укыусылар кабул итә:

Алыҫ ерҙәр менән бәйләнеш тота торған связь аппараттары, телефон аппараттары һәм АТС эшләп сығарыу өсөн электротехниктар әҙерләүсе электротехника бүлеге; металдарҙы һалкын көйөнсә кыркып эшкәртеү буйынса техник-технологтар әҙерләүсе механика бүлеге бар.

Техникумға ете йыллык мәктәпте тамамлаған кешеләр кабул ителә.

10 класты тамамлаған кешеләр махсус группаға кабул ителә.

Ғаризалар 1951 йылдың 1 августына тиклем алына.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, Зенцов урамы, 47-се номерле йорт. Телефон номерҙәре: 2-92-69, 2-92-66, 2-69-68.

Дирекция.

ӨФӨ ФИНАНС ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 укыу йылына

укыусылар кабул итә.

Техникум государство бюджете, государство доходы, акса әйләнеше һәм кредите буйынса финансистар, бюджет исәп-хисабы буйынса бухгалтерҙар әҙерләй.

Техникумға урта мәктәптең 7 класс күләмендә белеме булған 14 йәштән 30 йәшкә тиклемге граждандар кабул ителә.

Ете йыллык мәктәпте отличнога тамамлау тураһында аттестаты булған кешеләр техникумға кабул итеү һынауҙары тапшырмайынса алыналар. Башкалар түбәндәге фәндәрҙән кабул итеү һынауҙары бирәләр: СССР Конституцияһынан, рус теленән (телдән һәм яҙма), математиканан (телдән һәм яҙма).

Укырға кабул итеү тураһында ғаризалар 1951 йылдың 1 июненән 31 июленә тиклем алына.

Ғаризалар директор исеменә яҙыла һәм түбәндәге документтар менән бергә тапшырыла: белеме тураһында таныктама (подлинниктә), тыуған йылы тураһында таныктама, автобиография, 3 фотокарточка, һаулығы тураһында справка.

Кабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августка тиклем үткәрелә. Укыуҙар 1951 йылдың 1 сентябрендә башлана.

Укыу срогы 3 йыл.

Кабул ителеүселәр дөйөм нигеҙҙә стипендия менән тәьмин итәләләр. Районлан килеүселәр дөйөм торлак менән тәьмин итәләләр.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 15-се номерле йорт, телефон номерҙәре 2-77-91, 2-78-33

Дирекция.

РСФСР Урман промышленносе министерствоһының

ӨФӨ УРМАН ТЕХНИКАҺЫ ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 укыу йылына укыусылар кабул итә.

Техникум урмандарҙа ағас әҙерләү операцияларын механизациялаштырыу һәм электрләштереү буйынса техник-технологтар, шулай ук һал ағыҙыу эштәрен механизациялаштырыу һәм электрләштереү буйынса техниктар әҙерләй.

Техникумда укыу срогы 4 йыл. Техникумға кабул ителеүселәр ете йыллык мәктәп күләмендә белеме булырға тейеш.

Техникум эргәһендә столовой бар. Квартиралары булмаған укыусылар дөйөм торлак менән тәьмин ителә.

Ғаризалар 1951 йылдың 1 августына тиклем кабул ителә.

Кабул итеү һынауҙары 16 августа башлана.

Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, Аксаков урамы, 93-сө номерле йорт. Урман техникаһы техникумы. Телефон: 2-70-71, 2-78-63.

Дирекция.

РСФСР Министрҙәр Советы эргәһендәге баш юл Управлениеһенең

ӨФӨ ЮЛ ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 укыу йылына укыусылар кабул итә.

Техникум автомобиль юлдары һалыу өсөн һәм яһалма королмалар (күперҙәр, торбалар), линия буйҙарындағы йорттар, техник биналар төҙөү өсөн урындар әҙерләү, проектлау, төҙөү һәм эксплуатацияға тапшырыу буйынса техниктәр әҙерләй.

Укыу срогы 4 йыл.

Ғаризалар 1 июндән алып 31 июлгә тиклем кабул ителә. Кабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августка тиклем үткәрелә. Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Техникумдың дөйөм торлағы һәм столовойы, лабораторияһы, укыу кабинете һәм мастерскойы бар.

Укыуҙа өлгәшеүселәр бөтәһе лә дөйөм нигеҙҙә государство стипендияһы алалар.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, Омская урамы 9, юл техникумы, 2 һәм 3 номерле трамвай менән Киров исемендәге паркка тиклем барырға. Телефон 2-83-74.

Дирекция.

ӨФӨ СТАТИСТИКА ТЕХНИКУМЫ

1, 2, 3-сө КУРСТАРҒА УКЫУСЫЛАР КАБУЛ ИТӘ.

Укыу срогы 3 йыл.

Техникум СССР Үҙәк Статистика Управлениеһе өсөн статистика работниктәре әҙерләй.

Техникумға 14 йәштән 30 йәшкә тиклемге кешеләр кабул ителә.

Беренсе курска 7, 8, 9 класс күләмендә, икенсе курска 10 класс күләмендә белеме булған кешеләр алына.

Исәп-хисап бүлегенә (укыу срогы 1,5 йыл) 10 класс күләмендә белеме булған кешеләр алына.

Һынауҙар Юғары белем министерствоһы тарафынан техникумдар өсөн раҫланған программа буйынса дөйөм нигеҙҙә үткәрелә.

Ғаризалар 15 августка тиклем кабул ителә.

Кабул итеү һынауҙары 15 августан 25 августка тиклем үткәрелә.

Укыуҙар 1951 йылдың 1 сентябрендә башлана.

Техникумға кабул ителеүселәр дөйөм нигеҙҙә стипендия менән, райондан килеүселәр торлак менән тәьмин ителәләр.

Ғаризалар түбәндәге адреска ебәрелә: Башкорт АССР-ы, Өфө калаһы, Пушкин урамы, 100-сө номерле йорт. Өфө статистика техникумы директорына.

Телефон номерҙәре: 2-81-07, 2-75-11.

Дирекция.

БАШҠОРТ ГОСУДАРСТВО

МУЗЫКА УЧИЛИЩЕҺЕ

1951—1952 укыу йылына укыусылар кабул итә.

Музыка училищеһе оркестр, хор артистәре, йырсылар, пианистәр, педагогтар һәм хор етәкселәре әҙерләй.

Училищеға 14 йәштән алып 30 йәшкә *тиклем ике енестәге кешеләр ҙә* алына. Фортепиано һәм кыллы музыка коралдары бүлектәренең беренсе курстарына балаларҙың ете йыллык музыка мәктәбен тамамлаусылар кабул ителә.

Духовой һәм йыр кластарына инеү *өсөн махсус әҙерлек талап ителмәй.* Инергә теләүселәрҙең якшы музыкаль һәләтлелеге булырға тейеш.

УКЫУ СРОГЫ 4 ЙЫЛ.

Ғаризалар һәм документтәр 1 июндән 15 августка һәм Стәрлетамак, Октябрьский, Черниковск һәм Бөрө калаларындағы балалар музыка мәктәптәренә 1951 йылдың 1 майынан 10 июненә тиклем кабул ителә. Кабул итеү һынауҙары августа үткәрелә. Укыуҙар 1951 йылдың 1 сентябрендә башлана.

Ғаризаларҙы түбәндәге адреска ебәрергә: Өфө калаһы, Пушкин урамы, 83-сө номерле йорт. Телефон: 2-64-25.

Дирекция.

ӨФӨЛӘГЕ ДҮРТ ЙЫЛЛЫҠ

ФЕЛЬДШЕР-АКУШЕРКАЛАР МӘКТӘБЕ

1951—1952 укыу йылына укыусылар кабул итә.

Мәктәптең түбәндәге бүлектәре бар: фельдшер-акушеркалар бүлеге—фельдшер-акушеркалар әҙерләй, укыу срогы 4 йыл; акушеркалар бүлеге—акушеркалар әҙерләй, укыу срогы 3 йыл; санитар фельдшерҙәр бүлеге—санитар фельдшерҙәр әҙерләй, укыу срогы 3 йыл; медицина лаборанттары бүлеге—медицина лаборанттары әҙерләй, укыу срогы 2 йыл.

Мәктәпкә 7 класс күләмендә белеме булған, 14-тән 20 йәшкә тиклемге граждандар кабул ителә.

Мәктәпкә кабул итеү тураһындағы ғаризалар түбәндәге документтәрҙе теркәп 1 июндән алып 31 июлгә тиклем кабул ителә: автобиография, белеме тураһында таныктама (подлинниктә), тыуған йылы тураһында таныктама (подлинниктә), һаулығы тураһында справка, 3 фотокарточка. Паспортын һәм хәрби билетен укыусы үҙе алып килә.

Алыҫ райондарҙан килгән һәм торлакка мохтаж булған укыусылар дөйөм торлак менән тәьмин ителәсәр. Райондарҙан килгән башка укыусыларға һәм хосуси квартираларҙа тороусыларға квартира аксаһы түләнә.

Адрес: Өфө калаһы, Крупская урамы, 29-сы номерле йорт. Телефон 2-63-09.

Дирекция.

БАШҠОРТ САУҘА-КООПЕРАТИВ ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 укыу йылына түбәндәге бүлектәрҙең беренсе курсына укыусылар кабул итә.

Бухгалтерҙәр бүлеге—укыу срогы 3 йыл; товароведтәр—укыу срогы 3 йыл; план бүлеге—укыу срогы 3 йыл; укыу срогы кыскартылған бухгалтерҙәр бүлеге—укыу срогы 2 йыл. Укыу срогы 3 йыл булған бүлектәргә 7, 8, 9 класс күләмендә белемдәре булған кешеләр алына.

Укыу срогы ике йыл булған бухгалтерҙәр бүлегенә 10 класты тамамлаған кешеләр алына.

Техникум потребитель кооперациялары системаһында эшләү өсөн урта квалификациялы совет сауҙаһы специалистәре әҙерләй.

Техникумға инеүселәр түбәндәге фәндәрҙән кабул итеү һынауҙары тапшыралар: математика, география, СССР халктары тарихе, рус теле һәм әҙәбиәте.

Стипендия дөйөм нигеҙҙә бирелә, квартира аксаһы түләнә, постель кәрәк-яраклары бирелә. Техникум эргәһендә столовой бар.

Ғаризалар 1951 йылдың 10 августына тиклем кабул ителәләр. Кабул итеү һынауҙары 10 августан 25 августка тиклем үткәрелә. Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, Ленин урамы, 26-сы номерле йорт, 4-се этаж. Телефон номерҙәре 2-73-66, 2-74-70.

Дирекция.

СССР Нефть промышленносе министерствоһының

ӨФӨ ГЕОЛОГО-РАЗВЕДКА ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 укыу йылына укыусылар кабул итә.

Техникум урта квалификациялы түбәндәге специалистәрҙе әҙерләй: 1. Нефть һәм газ яткылыктарының геологияһы һәм разведкаһы; 2. Ялан геофизикаһы; 3. Промыслалар геофизикаһы.

Укыу срогы 4 йыл.

Техникумға дөйөм тәртиптә алына.

Ғаризалар 1951 йылдың 1 августына тиклем кабул ителә; кабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августка тиклем үткәрелә.

Техникумға кабул ителеүселәрҙең бөтәһе лә түбәндәге күләмдә стипендия менән тәьмин ителә: I курста укыусылар 285 һум, II курста—315 һум, III курста—360 һум, IV курста—390 һум. Отличниктәргә 25 процент күләмендә өстәмә стипендия бирелә.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, Ленин урамы, 35/37-се номерле йорт. Телефон номерҙәре 2-88-03, 2-75-12.

Дирекция.

РСФСР Аҙык промышленносе министерствоһының

БАШКОРТОСТАН АҘЫК ПРОМЫШЛЕННОСЕ ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 укыу йылына икмәк бешереү бүлегенең беренсе курсына укыусылар кабул итә.

Укыу срогы 3 йыл 8 ай.

Техникум икмәк бешереү промышленносе өсөн техник-технологтар әҙерләй.

Ғаризалар 1951 йылдың 1 июненән алып 1 августына тиклем кабул ителә. Кабул итеү һынауҙарына әҙерләнеү өсөн төп милләт укыусылары (башкорттар) өсөн 1 июлдән бер айлык курс ойоштоорола.

Кабул итеү шарттары техникумдар өсөн дөйөм.

Кабул итеү һынауҙары 1951 йылдың 1 августында башлана.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, Социалистик урам, 3-сө номерле йорт. Телефон 2-79-32.

Дирекция.

ӨФӨ ПЕДАГОГИЯ УЧИЛИЩЕҺЕ

1951—1952 укыу йылына укыусылар кабул итә.

Училищеның түбәндәге бүлектәре бар: укытыусылар, ете йыллык һәм урта мәктәптәргә өлкән пионер вожатыйҙар (**укыу срогы 4 йыл**), мәктәпкә тиклемге учреждениеларға тәрбиәселәр әҙерләү бүлектәре (укыу срогы 3 йыл).

Укытыусылар бүлегенә һәр ике енес граждандары, мәктәпкә тиклемге учреждениеларға тәрбиәселәр әҙерләү бүлегенә катын-кыҙҙар ғына кабул ителә.

Кабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августка тиклем үткәрелә. **Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.**

Укырға кабул итеү тураһындағы ғаризалар 1 июндән 31 июлгә тиклем алына.

Ғаризаларҙы башка документтәр менән түбәндәге адреска ебәрергә: Өфө калаһы, Киров урамы, 37-се номерле йорт. Телефон 2-90-44.

Дирекция.

ӨФӨ БИБЛИОТЕКА ТЕХНИКУМЫ

1951—1952 укыу йылына техникумдың I-се курсына укыусылар кабул итә.

Техникумға урта мәктәптең 7 класс күләмендә белеме булған 15 йәштән 35 йәшкә тиклем һәр ике енес граждандары кабул ителә.

Техникумға укыусылар дөйөм тәртиптә кабул ителә.

Ғаризалар 1951 йылдың 1 августына тиклем алына. Кабул итеү һынауҙары 15 августан 25 августка тиклем үткәрелә. Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, М. Горький урамы, 43-сө номерле йорт, библиотека техникумы, телефон 2-81-85.

Дирекция.

Редакцияның адресе: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02496 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№ 104(8821)
1951 йыл
29
МАЙ
шишәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин.

Б Ө Г Ө Н Г Ө Н О М Е Р Ҙ Ә:

СССР-ҙың ЛЕНИН ОРДЕНЛЕ ГОСУДАРСТВО АКАДЕМИЯ ҘУР ТЕАТРЫНЫҢ АРТИСТӘРЕНӘ ПОЧЕТЛЫ ИСЕМДӘР БИРЕҮ ТУРАҺЫНДА СССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ УКАЗЫ (1-се бит).

СССР-ҙың ЛЕНИН ОРДЕНЛЕ ГОСУДАРСТВО АКАДЕМИЯ ҘУР ТЕАТРЫНЫҢ АРТИСТӘРЕНӘ ПОЧЕТЛЫ ИСЕМДӘР БИРЕҮ ТУРАҺЫНДА РСФСР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ УКАЗЫ (1-се бит).

МӘКТӘПТӘРҘӘ ЭКЗАМЕНДӘР (1-се бит).

Е. Тулбаев. — Урожай йыйнауға комбайндар паркын алғала әҙерләргә (1-се бит).

ПРОПАГАНДИСТӘРҒӘ ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА. Г. Власов. — Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡта социалистик ауыл хужалығының уңыштары (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. А. Кондратьев. — Партия ойошмаһы илгә күберәк туҡымы биреү өсөн көрәшә (2-се бит).

С. Пылин. — Яуапһы осор (2-се бит).

ЯПОНИЯ МЕНӘН ЯРАШЫУ ДОГОВОРЫ ТУРАҺЫНДАҒЫ МӘСЬӘЛӘ БУЙЫНСА ҠЫТАЙ ХАЛЫҠ РЕСПУБЛИКАҺЫ ХӨКҮМӘТЕНЕҢ НОТАҺЫ. (3-сө бит).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. М. Синякин. — Тәҙәлештәрҙең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу өсөн (3-сө бит).

Р. Валиев. — Силикат заводы тәрән әҙәкләктә (4-се бит).

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР. (4-се бит).

Государство планы—һәр предприятие өсөн закон

Күп миллионлы совет эшселәре промышленность продукцияһы етештереү киңлеген артабан күтәреү, государство планын срогынан алда арттырып үтәү өсөн көрәшәләр. Совет халҡының фидакәр хеҙмәте илебеҙгә яңынан-яңы уңыштар килтерә. Коммунистәр партияһы, Совет Хөкүмәте һәм генераль юлбашсыбыҙ иптәш Сталин етәкселегендә, илебеҙ хеҙмәтсәндәре ҡуйыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәнеләр.

1950 йылда СССР-ҙа промышленность продукцияһы, 1940 йылға ҡарағанда, 73 процентҡа артыҡ етештерелде. Ҡара прокат, төҫле металдар етештереү, күмер сығарыу, нефть промышленносен аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү, электр энергияһы, станоктар, машиналар етештереү буйынса биш йыллыҡ заданиеләре шулай уҡ арттырып үтәлде. Хәҙерге замандың алдынғы техникаһы менән ҡоралланған социалистик ауыл хужалығыбыҙ ҙа алға китте. 1950 йылда бөртөклө ашлыҡ культураларының валовой урожайы 1940 йылғы урожайҙан 345 миллион ботҡа артыҡ булды. СССР-ҙа 1950 йылда эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр, шулай уҡ крәҫтиәндәр доходтарының дөйөм суммаһы, 1940 йылға ҡарағанда, сағыштырма хаҡтарҙа 62 процентҡа артты.

Был бөтә донъя әһәмиәтендәге уңыш, Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәтен артабан күтәреүгә, бөтә донъяла тыныслыҡты ныҡытыу эшенә яңы вклад булып тора.

Беҙҙең социалистик хужалыҡ — ул планлы хужалыҡ. Планлылыҡ беҙҙең социалистик экономикабыҙҙың артабан туҡтауһыҙ үҫеүен тәьмин итә. Большевиктар партияһы һәм иптәш Сталин совет кешеләрен беҙҙең пландарыбыҙҙы һәр ваҡыт даими үтәп барырға өйрәтә.

Партияның XVIII конференцияһы ҡарары промышленность предприятиеләренең һәм транспорттың бөтә етәкселәрен һәм улардағы партия ойошмаларын государство пландарын үтәүҙә оператив һәм ҡаты эшләргә ҡушты.

«а) продукция етештереү буйынса йыллыҡ, квартал һәм айлыҡ пландарҙы уртаса ғына түгел, — тип әйтелә XVIII конференцияның ҡарарында, — ә айыр продукцияны етештереү буйынса тигеҙ үтәргә;

б) планды уртаса алғанда промышленность тармаҡтары буйынса ғына түгел, айырым алғанда һәр бер предприятие буйынса үтәргә;

в) планды уртаса алғанда предприятие буйынса ғына түгел, ә һәр бер цехта, һәр бер бригадала, һәр бер станокта, һәр бер сменала көн һайын үтәргә;

г) планды һан күрһәткестәре буйынса ғына түгел, ә мотлаҡ сифат, комплект, ассортимент буйынса ла, билдәләнелгән стандарттарҙы һаҡлап һәм план менән билдәләнгән үҙенә төшөү хаҡы буйынса үтәргә».

Был тарихи ҡарар—хәҙер ҙә республикабыҙҙың бөтә предприятие коллективтәре өсөн көндәлек эш программаһы ул. Предприятие коллективтәре, партия, комсомол һәм *профсоюз ойошмалары етәкселегендә* айлыҡ, квартал һәм йыллыҡ планды валовой продукцияның дөйөм суммаһы буйынса ғына үтәү түгел, ә номенклатура буйынса продукцияның һәр бер төрөн натураһата етештереү планын да срогынан алда үтәү өсөн көрәшәләр. Республикабыҙҙың алдынғы предприятиеләре коллективтәре коммунизмдең бөйөк төҙөлештәре заказдарын срогынан алда үтәү өсөн, производство заданиеһен көн һайын смена, бригада, цех һәм участка буйынса үтәү өсөн көрәштә уңышлы хеҙмәт алғаһәре күрһәтәләр.

Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективе һуңғы ике айҙа үҙенең эшен байтаҡ яҡшыртты. Продукцияның сифаты күтәрелде. Завод коллективе апрель айында государство планын арттырып үтәне. Уңа май айында ла эш уңышлы барҙы. Заводта бөтә цехтарҙың, установкаларҙың һәм айырым эшселәрҙең заданиеләрен арттырып үтәү өсөн көрәш киң йәйелдерелгән. Начальнигы иптәш Закиров булған цехта дүрт айлыҡ план үтәлеше 101,6 процент тәшкил итте. Цех 4 ай эсендә государствоға 200 мең һумдан артығыраҡ файҙа бирҙе. Иптәш Ивонин етәкселек иткән комсомолец-йәштәр установкаһы коллективе апрель айы производство планын 107,5 процентҡа үтәне. Бындай цехтар, установкалар, бригадалар заводта күп. Уларҙың планды уңышлы үтәүҙәре һәм экономик күрһәткестәрҙе әҙләкһеҙ яҡшыртыуҙары, бигерәк тә әлек, партия ойошмалары етәкселегендә эшселәрҙең, инженер-техник работниктарҙың алдынғы методтарҙы производствоға индереүҙәре, техник белемдәрен күтәреү өҫтөндә эшләүҙәре, тыныслыҡты ныҡытыу һәм коммунизм төҙөү эшендә фидакәр хеҙмәт итеүҙәре сәмәһе булып тора. Коллективтең ижади фекере, продукцияның юғары сифаты өсөн, планды үтәү һәм экономия режимы өсөн көрәше государство планын һәм көндәлек заданиены арттырып үтәүгә мөмкинлек бирә. Республикабыҙҙа Краснoусол быяла заводы, Өфө тау оборудованиеләре заводы, Черниковск фанера комбинаты, Түбән-Троицк буҫтау фабрикаһы, 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһы һәм башҡа бик күп предприятиеләр коллективтәре яҡшы эшләп киләләр. Улар продукцияны натураһата етештереү планын үтәү менән бер рәттән, валовой продукция буйынса ла планды уңышлы үтәйҙәр. Бындай предприятиеләр хәҙер республикабыҙҙа күп, уларҙың һаны арта бара.

План үтәлеше өсөн көрәштә уңыштар менән бер рәттән, республика предприятиеләрендә ҙур ғына етешһеҙлектәр ҙә бар әле. Ҡайһы бер предприятиеләр ошо көнгә тиклем государство планын айҙан-айға, йылдан-йылға үтәп еткермәйҙәр. «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының бөгөнгө номерендә, Өфө силикат заводы тураһында корреспонденция урынлаштырылды. Унда Өфө силикат заводы коллективенең үткән йылғы производство планын ни бары 41,7 процентҡа ғына үтәүе сәбәптәре асылған. Завод коллективенең 1951 йылдың I кварталында ла план үтәлеше 60,4 процент кенә тәшкил итте. Унда пландың үтәлмәүендә төп сәбәп оборудованиеләрҙе тулы ҡеүәтендә файҙаланмауҙа, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштормауҙа. Унда предприятиеның техник етәкселеге план өсөн көрәштә ғәмһеҙлек күрһәтә. Коллективтә политик-тәрбиә эштәре насар ҡуйылған. Заводта кадрҙар менән эш алып барылмай, даими кадрҙар булдырыу өсөн хәстәрлек юҡ, партия ойошмаһы заводтың, цехтарҙың һәм һәр бер эшсенең планды уңышлы үтәүенә йүнәлдерелгән ойоштороу сараларын үткәрмәй, коллективте фидакәр хеҙмәткә йүнәлдермәй. Стәрлетамаҡ таҡта ярыу, Өфө суднолар ремонтлау заводтарында ла государство планын үтәү өсөн көрәш яҡшы тип әйтеп булмай әле.

Һәр бер предприятие коллективе эшмәкәрлегендә государство планы — закон. Ул һис һүҙһеҙ үтәлергә тейеш. Бының өсөн, бөтәһенән элек, оборудованиеләрҙе, инструменттарҙы, сырье һәм материалдарҙы файҙаланыуҙы бик ныҡ яҡшыртырға, государство милкен һаҡларға, производствоны культуралы торорға, алдан әҙерләнгән график буйынса эшләргә, технологик һәм хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытырға, яңы техниканы үҙләштерергә һәм камиллаштерергә, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын систематик кәметергә, буш тороуҙарҙы бөтөрергә һәм мастерҙарҙың ролен күтәрергә кәрәк. Шул нигеҙҙә һәр бер предприятие коллективында хеҙмәт етештереүсәнлеген юғары күтәреүгә өлгәшергә мөмкин. Бөтә был сараларҙың предприятиеләрҙә үтәлеүенә ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттәре, ҡала һәм район Советтәренең исполкомдары ныҡлы контроль алып барырға тейештәр. Ҡайһы бер предприятиеләрҙә етәксе работниктар йәнле, оператив етәкселекте һөҙөмтәһеҙ кәңәшмәләр үткәреү, кабинеттан телефон аша ғына «етәкселек» итеү менән алмаштыралар, ә заводтың хәле менән тәрән танышмайҙар. Бындай хәсрәт етәкселек методын, яраҡһыҙ методты, әлбиттә, бөтөрергә ваҡыт.

Большевистик ойошҡанлыҡ, етешһеҙлектәрҙе күрә белеү, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү, стахановсылар хәрәкәте һәм социалистик ярыш менән етәкселек итеү — партия профсоюз һәм комсомол ойошмаларының көндәлек төп һәм мөһим бурыстарынан иҫәпләнә ул. Был бурысты предприятие етәкселәре, һәр бер эшсе, инженер-техник работник һәм хеҙмәткәр государство планының һәр бригадала, участкала, цехта һәм предприятиела үтәлеүенә йүнәлдерергә тейеш. Тик шул ваҡытта ғына беҙ промышленносебеҙҙең артабан үҫеүенә һәм Тыуған илебеҙҙә коммунизм төҙөү эшенә ныҡлы вклад индерербеҙ.

СССР-ҙың Ленин орденле Государство Академия Ҙур театрының артистәренә почетлы исемдәр биреү тураһында
СССР Верховный Советы Президиумының Указы

Совет музыка-театр искусствоһын үҫтереүҙә күренекле хеҙмәттәре өсөн һәм СССР-ҙың Ленин орденле Государство Академия Ҙур театрына нигеҙ һалыныуға 175 йыл тулыу айҡанлы түбәндәге почетлы исемдәрҙе бирергә:

СССР халыҡ артисы

1. **Иванов** Алексей Петровичҡа
2. **Лепешинская** Ольга Васильевнаға
3. **Мелик-Пашаев** Александр Шамильевичҡа
4. **Нэлепп** Георгий Михайловичҡа
5. **Уланова** Галина Сергеевнаға
6. **Файер** Юрий Федоровичҡа
7. **Ханаев** Никандр Сергеевичҡа

СССР халыҡ художнигы

1. **Федоровский** Федор Федоровичҡа

СССР Верховный Советы Президиумының Председателе **Н. ШВЕРНИК.**
СССР Верховный Советы Президиумының Секретаре **А. ГОРКИН.**

Мәскәү, Кремль, 27 май, 1951 йыл.

ССР Союзының Ленин орденле Государство Академия Ҙур театрының артистәренә почетлы исемдәр биреү тураһында
РСФСР Верховный Советы Президиумының Указы

Совет музыка-театр искусствоһын үҫтереүҙә күренекле хеҙмәттәре өсөн һәм ССР Союзының Ленин орденле Государство Академия Ҙур театрына нигеҙ һалыныуға 175 йыл тулыу айҡанлы түбәндәге почетлы исемдәрҙе бирергә:

РСФСР халыҡ артисы

1. **Антонова** Елизавета Ивановнаға
2. **Большаков** Григорий Филипповичҡа
3. **Габович** Михаил Марковичҡа
4. **Давыдова-Мчедлидзе** Вера Александровнаға
5. **Ермолаев** Алексей Николаевичҡа
6. **Захаров** Ростислав Владимировичҡа
7. **Златогорова** Бронислава Яковлевнаға
8. **Кривченя** Алексей Филипповичҡа
9. **Лисициан** Погос Карапетовичҡа
10. **Максакова** Мария Петровнаға
11. **Мессерер** Асаф Михайловичҡа
12. **Селиванов** Петр Ивановичҡа
13. **Семенова** Марина Тимофеевнаға
14. **Стрельцов (Бурлак)** Иван Павловичҡа
15. **Шумская** Елизавета Владимировнаға

РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле

1. **Гамрекели** Давид Александровичҡа
2. **Гаук (Гердт)** Елизавета Павловнаға
3. **Дулова** Вера Георгиевнаға
4. **Крамолов** Николай Николаевичҡа
5. **Кригер** Викторина Владимировнаға
6. **Небольсин** Василий Васильевичҡа
7. **Петровский** Михаил Александровичҡа
8. **Смольцов** Иван Васильевичҡа
9. **Шорин** Михаил Георгиевичҡа

РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы

1. **Боголюбовская** Марианна Сергеевнаға
2. **Борисенко** Вера Ивановнаға
3. **Буравский** Исаак Марковичҡа
4. **Варшавская (Фирсова)** Вера Михайловнаға
5. **Василевский** Иван Антоновичҡа
6. **Гертович** Иосиф Францевичҡа
7. **Жук** Исаак Абрамовичҡа
8. **Калиновский** Соломон Иосифовичҡа
9. **Кондрашин** Кирилл Петровичҡа
10. **Коваленко** Илларион Варфоломеевичҡа
11. **Краузе (Петров)** Иван Ивановичҡа
12. **Лапаури (Стручкова)** Раиса Степановнаға
13. **Масленникова** Ирина Ивановнаға
14. **Масленникова** Леокадия Игнатьевнаға
15. **Матковский** Владимир Исааковичҡа
16. **Михайлов** Сергей Ивановичҡа
17. **Панова** Мария Ивановнаға
18. **Петрова** Галина Петровнаға
19. **Плисецкая** Майя Михайловнаға
20. **Преображенский** Владимир Алексеевичҡа
21. **Сангович** Ядвига Генриховнаға
22. **Смирнов** Михаил Ивановичҡа
23. **Сохова (Турчина)** Александра Кузьминичнаға
24. **Смоленская** Евгения Федоровнаға
25. **Стучевский** Израиль Калмановичҡа
26. **Тихомирнова** Ирина Викторовнаға
27. **Фарманянц** Георгий Карапетовичҡа
28. **Федотов** Федор Петровичҡа
29. **Цаплин** Виктор Ивановичҡа
30. **Черкасова** Людмила Константиновнаға

РСФСР Верховный Советы Президиумының Председателе **М. ТАРАСОВ.**
РСФСР Верховный Советы Президиумының Секретаре **И. ЗИМИН.**

Мәскәү, 27 май, 1951 йыл.

СССР-ҙың Ленин орденле Государство Академия Ҙур театрының артистәрен һәм художество-техник работниктәрен ордендәр һәм медалдәр менән наградлау

Совет музыка-театр искусствоһын үҫтереүҙә күренекле хеҙмәттәре өсөн һәм СССР-ҙың Ленин орденле Государство Академия Ҙур театрына нигеҙ һалыныуға 175 йыл тулыу айҡанлы СССР Верховный Советы Президиумының 1951 йылдың 27 майындағы Указы менән театр работниктәренең ҙур төркөмө наградланды.

Ленин ордене менән: СССР халыҡ артисы **Н. С. Голованов**, СССР халыҡ артисы **И. С. Козловский**, СССР халыҡ артисы **С. Я. Лемешев**, РСФСР халыҡ артисы **М. Д. Михайлов**, СССР халыҡ артисы **П. М. Норцов**, СССР халыҡ артисы **А. С. Пирогов**, СССР халыҡ артисы **М. О. Рейзен**, РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы **Н. Д. Шпиллер**, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән 76 кеше, «Почет билдәһе» ордене менән — 232 кеше һәм «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медале менән 147 кеше наградланды. (ТАСС).

М Ә К Т Ә П Т Ә Р Ҙ Ә Э К З А М Е Н Д Ә Р

Республика мәктәптәрендә

Быйыл республикабыҙҙың бөтә мәктәптәрендә лә экзамендарға һәм һынауҙарға әҙерлек эштәре үткән йылдарға ҡарағанда яҡшы ойошторолдо. Район, ҡала мәғариф бүлектәре, мәктәптәрҙең дирекциялары һәм уҡытыусылар коллективтәре уҡыусыларға экзамендарға әҙерләнеү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыуға айырыуса иғтибар иттеләр. Үтелгән материалдарҙы ҡабатлау белемде ныҡытыуҙа ҙур роль уйнай. Шуның өсөн әҙерлек ваҡытында уларҙы ҡабатлауҙы алғала ойоштороуға, өҫтәмә дәрестәр, айырым темалар буйынса лекциялар, бесәдәлар үҙғарыуға, шулай уҡ уҡыусыларҙың ял һәм эш ваҡыттарының дөрөҫ үҙғарылыуына ҙур әһәмиәт бирелде. Бөтә мәктәптәр ҙә экзамендарға кәрәкле булған материалдар һәм пособиелар менән тулыһынса тәьмин ителде һәм мәктәп биналары матур итеп йыһазландырылды.

Республикабыҙҙың бөтә мәктәптәрендә лә экзамендар ҙур ойошҡанлыҡ менән башланды һәм уңышлы дауам итә. Абзан урта мәктәбен тамамлап сығыусылар рус әҙәбиәтенән яҙма эште уңышлы башҡарҙылар, шулай уҡ эшсе йәштәр мәктәбен тамамлаусылар ҙа яҡшы һөҙөмтәләр күрһәттеләр. Ҡыйғы районының 3 урта мәктәбендә 10-сы класта уҡыусыларҙың бөтәһе лә өлгөргәнлек атестатына экзамендарға индерелде. Уларҙың тәүге эштәре үтелгән материалдарҙы яҡшы үҙләштергәнлектәрен күрһәтте.

Нуриман, Ғафури, Архангель һәм күп кенә башҡа райондарҙан да экзамендарҙың яҡшы күрһәткестәр менән уңышлы барыуы тураһында хәбәр итәләр.

Быйылғы экзамендар уҡыусыларҙың бөтә фәндәрҙе лә ныҡ үҙләштергәнлектәре тураһында һөйләйҙәр. һәм был тәүге уңыштар, әлбиттә, республикабыҙҙың күпселек мәктәптәрендә экзамендарҙың яҡшы һөҙөмтәләр менән тамамланасағына ышаныс белдерәләр.

ОХЛЕБИНИН МӘКТӘБЕНДӘ

Иглин районы Охлебинин ете йыллыҡ урта мәктәбендә экзамендар эшлекле шарттарҙа бара. Рус теле буйынса дүрт класта үткәрелгән яҙма эштәр һөҙөмтәһе түбәндәгеса булды: 13 бала «5», 37 бала «4», 29 бала «3» билдәһе алдылар.

Арифметика буйынса яҙма эш өсөнсө биш класта үткәрелде. Был кластарҙа уҡыусы 80 бала ла яҙма эште үтәнеләр. Насар билдәһе алыусы булманы.

Бишенсе класс уҡыусылары Курунов һәм Яримеико яҡшы һөҙөмтә бирҙеләр. Уларҙың яҙма эше айырыуса бай йөкмәткеле һәм грамоталы булды.

Республикабыҙҙың мәктәптәрендә, техникумдарҙа һәм юғары уҡыу йорттарында экзамендар бара. Һүрәттә: Өфө финанс техникумының өсөнсө курс студенттары ... экзамен тапшыралар, уларҙан уҡытыусы А. Н. Субботина.
М. Әхмәтйәнов фотоһы.

Юғары урожайға нигеҙ һалынды

Вәшей районы, Раевка бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективе быйыл яҙғы баҫыу эштәрен ҙур ойошҡанлыҡ менән алып барҙы. Эшкә башлауҙың тәүге көндәренән үк сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары сифатлы итеп тамамлау өсөн йәйелдерелгән ярыш үҙенең гүзәл һөҙөмтәләрен бирҙе. Совхоздың Красный Ключ бүлексәһендә эшләүсе тракторист иптәш Жонин С—80 тракторы менән ашлыҡ сәсеүҙә смена нормаһын 160-ар процентҡа үтәп, нигеҙ көн эсендә 617 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Шулай уҡ Линде бүлексәһендә эшләүсе Елизаров һәм Косачев иптәштәр ҙә көн һайын 98-әр һәм 140-ар гектар майҙанда ашлыҡ сәсеп, ярыштың иң алғы сафында барҙылар.

Механизаторҙарҙың бына ошолай намыҫ менән эшләүҙәре арҡаһында совхоз 6386 гектар майҙанда яҙғы культураларҙы сәсеүҙе 14 майға уҡ тулыһынса тамамланы. Совхозда пар һөрөү эштәре лә тамамланыу алдында.

Урожай йыйнауға комбайндар паркын алғала әҙерләргә

Партия һәм хөкүмәт беҙҙең республиканың ауыл хужалығына ғәйәт ҙур ярҙам күрһәтәләр. Колхоз баҫыуҙарында меңәрләгән комбайндар һәм тракторҙар эшләй. Ошо арҡала быйыл республиканың колхоздары яҙғы сәсеүҙе ойошҡанлыраҡ үткәрҙеләр. Быйылғы яҙғы яҡшы килеүе сәсеүлектәрҙең бөрҙәм сығышына һәм үҫешенә мөмкинлек бирҙе. Хәҙер күп кенә колхоздарҙа сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәре бара.

Быйыл яҙдың иртә килеүе урожай йыйнау эштәрен дә үткән йылға ҡарағанда иртәрәк башлау мөмкинлеген бирәсәк. Шуға күрә партия, совет һәм ауыл хужалығы органдары урожай йыйнауға алғала әҙерлекте тәьмин итер өсөн бөтә сараларҙы күрергә бурыслылар.

Быйыл комбайндар менән урожай йыйнау планы байтаҡ артасаҡ. Ә урожайҙы үҙ ваҡытында, юғалтыуҙарға юл ҡуймайынса, йыйнап алыу баҫыу караптарының юғары сифатлы ремонтланыуына бәйләнгән.

Бөйөк Сталин былай тип өйрәтә: **«Урожай йыйнау сезонлы эш, һәм ул көтөп тороуҙы яратмай. Урожайҙы ваҡытында йыйнап алдыңмы — оттоң, йыйнап алыуҙа һуңға ҡалдыңмы — оттораҙың. Комбайндың әһәмиәте уның урожайҙы ваҡытында йыйнап алыуға ярҙам итеүенән тора...**

Ләкин комбайндың әһәмиәте бының менән генә сикләнмәй. Уның әһәмиәте тағы ла шунда, ул беҙҙе бик ҙур юғалтыуҙарҙан ҡотҡара». Республиканың алдынғы МТС-тары иптәш Сталиндең был күрһәтмәһен тормошҡа ашыра барып, комбайндарҙы урожай йыйнауға әҙерләүгә ҙур иғтибар бирәләр.

Дәүләкән күргәҙмә-тәрәҡ МТС-ы комбайндар менән урожай йыйнау планын был һайын үтәй. МТС быйыл да был яуаплы мәһим сезонға яҡшы әҙерләнә. Бында комбайндарҙы ремонтлау эше быйыл апрель айында уҡ тамамланды. Суҡҡул, Октябрьский, Матрай һәм башҡа МТС-тарҙа ла урожай йыйнау эштәренә әҙерлек яҡшы бара.

Ләкин был өлкәлә әле етешһеҙлектәр ҙә бик күп. Асҡын, Әбйәлил, Ҡылайыр машина-трактор станциялары бер генә машинаны ла ремонттан сығармағандар. Учалы, Петровск МТС-тарында эш үтә аҡрын темп менән бара. Республиканың ушарлаған МТС-тары комбайндар паркын урожай йыйнау эштәренә тиҙерәк әҙерләү сараларын күрмәйҙәр.

Күпселек урында зарарлы һәүбәтселеккә юл ҡуялар. Сәсеү бөткәнсе көтөп урожай йыйнауға әҙерлекте ойоштормайҙар. Ауыл хужалығы Министерствоһы МТС-тарға комбайндарҙы май айында ремонтлап бөтөүгә иҫәп тотҡан график бирген. Ләкин был график тик ҡағыҙҙа ғына ҡала. Әле һаман бик күп урындарҙа ремонт эшенә бөтә комбайнерҙар һәм уларҙың ярҙамсылары йәлеп ителмәгән.

Дыуан МТС-ында ремонтҡа тик биш комбайнер генә килгән. МТС директоры иптәш Степанов урожай йыйнауға әҙерлек эштәре менән етәкселек итеүҙән ситләшкән. Ул хеҙмәтте ойоштороу мәсьәләләре менән шөғөлләнмәй, механиктарҙың эшен контролгә алмай. Шаран, Языково, Әбдрәшит машина-трактор станцияларында ремонтта бригадно-узловой методты ҡулланмайҙар. Ә Бәләбәй МТС-ы комбайнерҙәре һәр кем үҙ машинаһын ғына ремонтлай. Һөҙөмтәлә ремонтсыларҙың хеҙмәт етештереүсәнлеге түбән. Бында комбайнерҙар кадрҙарын әҙерләү мәсьәләләренә лә иғтибар итмәйҙәр. Ремонттың сифаты түбән.

Был МТС-тарҙың етәкселәре комбайндың урожай йыйнауҙа төп машина икәнлеген иҫтән сығарғандар. Хәҙер һис кисектермәйенсә ремонттың темпы һәм сифаты өҫтөнән большевистик контроль булдырырға кәрәк. Сөнки ҡайҙа эш өҫтөнән тейешле контроль юҡ, унда әҙәклек тыуа. Бурыс — бөтә төр ауыл хужалығы машиналарын урожай йыйнауға алғала әҙерләүҙән тора. МТС-тарҙың тәүге партия ойошмалары механизаторҙарҙың социалистик ярышын йәйелдереү, ремонтта резервтарҙы файҙаланыу өсөн бөтә сараларҙы күрергә бурыслылар. **Е. Тулбаев.**

Трактор эштәре планы арттырып үтәлде

Ҡырмыҫҡалы МТС-ының иптәш Минеев етәкселек иткән трактор бригадаһы Пушкин исемендәге колхозды хеҙмәтләндерә. Был бригада быйыл баҫыу эштәренә башлауҙың тәүге көндәренән үк эште ике сменала ойошторҙо. Трактористар смена заданиеләрен көн һайын 140—150 процентҡа үтәнеләр.

Бригада 20 майға трактор эштәренең яҙғы планын 106 процентҡа үтәне. Бөтәһе 468 гектар ер һөрөлдө, 1220 гектар ашлыҡ сәселде, 2000 гектар майҙанда культивация үткәрелде. Бригада 1003 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Н. Фатхуллина.

ПРОПАГАНДИСТАРҒА ҺӘМ АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА

Һуғыштан һуңғы биш йыллыкта социалистик ауыл хужалығының уңыштары

Ленин — Сталин партияһы тарафынан етәкселек ителгән совет халҡы халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙәге һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планын уңышлы үтәне. Был — беҙҙең халҡыбыҙҙың коммунизм юлынан алға табан яңы мөһим аҙымы.

Биш йыллыҡ планды 4 йылда һәм 3 айҙа үтәгән социалистик индустрия менән бергә, социалистик ауыл хужалығы ла бик ҙур уңыштарға өлгәште.

Ауыл хужалығын коллективлаштырыуҙың ленинсе-сталинсе политикаһын тормошҡа ашырып, большевиктар партияһы иптәш Сталин етәкселегендә ауыл хужалығын социалистик үҙгәртеп ҡороуҙа бөтә донъя күләмендә тарихи уңыштарға өлгәште. Коллективлаштырыу юлы ауыл хужалығының быуаттар буйына артта ҡалыуын бик ҡыҫҡа сроктарҙа бөтөрергә, уның етештереүсе көстәрен бик ныҡ алға ебәрергә мөмкинлек бирҙе.

Һуғыш ваҡытында немец-фашист илбаҫарҙары илебеҙҙең халҡ хужалығына, шул иҫәптән социалистик ауыл хужалығына ла бик ҙур зарар килтерҙеләр. Ауыр һуғыш эҙемтәләрен бөтөрөү, беҙҙең ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм уны алға ебәреү өсөн совет кешеләренә күп хеҙмәт һалырға тура килде.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ план тураһындағы Законда: урожайлылыкты бөтә саралар менән күтәреү һәм ауыл хужалығы продукттарының валовой йыйымын арттырыу, общественный малдарҙың һанын арттырыу һәм уның продуктивлегын күтәреү, колхоздарҙың общественный хужалыҡтарын нығытыу СССР ауыл хужалығының иң мөһим бурыстары булып тора, тип күрһәтелгәйне. Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың йомғаҡтары колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз работниктәре был бурыстарҙы намыҫ менән үтәйҙәр икәнлеген күрһәтә.

Биш йыллыҡ планды уңышлы үтәү һөҙөмтәһендә илебеҙҙең ауыл хужалығы яңы ҡеүәтле күтәрелешкә өлгәште. Колхоздарҙың общественный хужалығы үҫте һәм тағы ла күберәк нығынды, ауыл хужалығының материаль-техник базаһы үҫте, колхоз производствоһында машина-трактор станцияларының роле күтәрелде, яңы квалификациялы кадрҙар әҙерләнде. 1950 йылда Литва, Латвия, Эстония, Молдавия Союзный Республикаларының, Украина ССР һәм Белорус ССР-ының көнбайыш өлкәләренең крәҫтиән хужалыҡтарын коллективлаштырыу нигеҙҙә тамамланды. Һуғыштан һуңғы осорҙа социалистик хужалыҡ системаһының капиталистик системаға ҡарағанда бөйөк өҫтөнлектәре яңы көс менән күренделәр.

* * *

Бөртөклө ашлыҡ проблемаһы ауыл хужалығының бөтә башҡа проблемаларын, шул иҫәптән малсылыҡ проблемаларын да хәл итеү өсөн асҡыс булып тора, тип күрһәтте иптәш Сталин. Большевиктар партияһы, иптәш Сталиндең был күрһәтмәһен үтәп, колхоз крәҫтиәндәрен, МТС һәм совхоз работниктәрен бөртөклө ашлыҡ етештереүҙең яңы күтәрелеше өсөн көрәшкә ойошторҙо. Социалистик игенселек работниктәренең фиҙакәр хеҙмәте, ауылда бөтә халҡ социалистик ярышы гүзәл еңеүҙәр менән билдәләнде. Бөртөклө ашлыҡ культураларының сәсеү майҙандары биш йылда 20 проценттан күберәккә артты. 1950 йылда бөртөклө ашлыҡтың валовой урожайы 7,6 миллиард ботҡа етте, һуғышҡа тиклемге 1940 йыл кимәлен 345 миллион ботҡа уҙып китте, бойҙай етештереү 376 миллион ботҡа артты.

Яңы, күберәк камиллашҡан техниканы файҙаланып, алдынғы мичуринсе агробиология фәненең ҡаҙаныштарын һәм новаторҙарҙың тәжрибәләрен производствоға киң индереп, колхоздар һәм совхоздар бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайлылығын күтәреүҙә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайлылығын күтәреү буйынса биш йыллыҡ план менән билдәләнгән задание арттырып үтәлде: 1949 һәм 1950 йылдарҙа урожай 1940 йылдағы урожайҙы 13 процентҡа уҙып китте. Шул уҡ ваҡытта иң гүзәле шунан тора, колхоздар айырым участкаларҙағы рекордтарҙан ҙур массивтарҙан юғары һәм тотороҡло урожай алыуға ышаныслы күсәләр. Үткән йылда уртаса гектарынан йөҙ ботлы урожайҙы күп колхоздар ғына түгел, бәлки күп районлар ҙа алдылар инде.

Ауыл хужалығы эшсәндәре техник культуралар етештереүҙә лә ҙур еңеүгә өлгәштеләр. Был культураларҙың сәсеү майҙандары биш йыл эсендә 59 процентҡа артты.

Мамыҡсылыҡты аяҡҡа баҫтырыуҙа һәм үҫтереүҙә сербез уңыштарға өлгәшелде. Мамыҡ сәсеү майҙандары биш йыл эсендә 91 процентҡа артты һәм һуғышҡа тиклемге күләмдәрҙе мамыҡсылыҡ һуғарыла торған районлары ла, шулай уҡ һуғарылмай торған районлар ҙа уҙып киттеләр. 1950 йылда ашҡартылмаған мамыҡтың валовой урожайы биш йыллыҡ план тарафынан 1950 йылға билдәләнгән урожай күләмдәрен 650 мең тоннаға уҙып китте.

Ороп еткендең сәсеү майҙандары биш йыл эсендә 90 процентҡа, шәкәр сөгелдәрә — 57 процентҡа, көнбағыш 23 процентҡа артты. Колхоздарҙа был культураларҙың сәсеү майҙандары һуғышҡа тиклемге кимәлгә етеп кенә ҡалманы, бәлки уны уҙып та китте.

Каучук, еҫ һәм майлы культуралар етештереү буйынса сербез эш башҡарылды.

Ауыл хужалығының яңы күтәрелеше еңел һәм аҙыҡ промышленноҫенең сырьеға, халҡтың икмәккә, иткә, һөткә һәм ауыл хужалығының башҡа продукттарына булған үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндереүҙе тәьмин итте.

* * *

Большевиктар партияһының, Совет хөкүмәтенең социалистик игенселектең артабан сәскә атыуы тураһында саралар күреүе һәм иптәш Сталиндең бөйөк хеҙмәтләре арҡаһында һуғыштан һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығын механизациялаштырыуҙың нигеҙе булған тракторҙар һәм ауыл хужалығы машиналары тәҙәлеше базаһы байтаҡ киңәйҙе һәм нығынды. 1950 йылда тракторҙар эшләп сығарыу, һуғышҡа тиклемге 1940 йыл менән сағыштырғанда, 3,8 тапҡырға, комбайндар — 3,6 тапҡырға, трактор һабандары — 3,1 тапҡырға, трактор сәскестәре 5,5 тапҡырға, трактор культиваторҙары — 3,1 тапҡырға артты.

Биш йыллыҡ йылдары эсендә социалистик промышленность ауыл хужалығына 536 мең трактор (15 ат көсөлөгә күсереп иҫәпләгәндә), 93 мең комбайн, шул иҫәптән 39 мең үҙе йөрөй торған комбайн, 341 мең трактор һабаны, 254 мең трактор сәскесе, 249 мең трактор культиваторы һәм күп һанда башҡа ауыл хужалығы машиналары бирҙе, шуның менән бергә колхоздарҙы, МТС-тарҙы һәм совхоздарҙы электрлаштырыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарылды. Ауыл электр станцияларының ҡеүәте 1950 йыл аҙағына, 1940 йылға сағыштырғанда, 2,8 тапҡырға артты.

Социалистик государствоның был ҙур ярҙамы ауыл хужалығының материаль-техник базаһына һуғыш тарафынан килтерелгән зарарҙы тулыһынса бөтөрөүгә генә түгел, бәлки МТС, совхоз һәм колхоздарҙың техник ҡоралланыуының һуғышҡа тиклемге кимәлен байтаҡ уҙып китергә мөмкинлек бирҙе.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ ауыл хужалығының ҡеүәтле техника менән ҡоралланыуының етеҙ темптары менән генә түгел, бәлки беҙҙең промышленноҫебеҙ эшләп сығара торған тракторҙарҙың һәм ауыл хужалығы машиналарының сифатын күтәрелеү менән дә характерлана.

Биш йыл эсендә 150-нән артыҡ яңы камиллашҡан юғары етештереүсәнле ауыл хужалығы машинаһы үҙләштерелде һәм массовый етештереүгә ҡабул ителде. Культуралы һөрөүҙе тәьмин итә торған предплужникле трактор һабандарының яңы типтары һәм маркалары булдырылды һәм күп һанда эшләп сығарылды, парҙы һәм көҙ һөрөлгән ерҙе эшкәртеү өсөн камиллаштырылған культиваторҙар, комбинировать ителгән сәскестәр, дисканы лущильниктәр, юғары етештереүсәнле ашлыҡ комбайндары—«Сталинец—6» һәм үҙе йөрөй торған комбайндар «С—4», етен, шәкәр сөгелдәре, картоф йыйыу өсөн комбайндар, мамыҡ йыйыусы машиналар, үҙе йөрөй торған киң ротлы бесән сапҡыстар һәм тупраҡ эшкәртеүсе, сәсеүсе, йыйыусы башҡа машиналар һәм малсылыҡта ауыр эш процестәре өсөн машиналар булдырылды һәм күптән эшләп сығарылалар.

Бер үк ваҡытта шуны әйтергә кәрәк: илдең ауыл хужалығын мамыҡ, етен, киндер, шәкәр сөгелдәре йыйыу машиналары менән тәьмин итеү, колхоздар һәм совхоздарҙың малсылыҡ фермаларында аҙыҡ әҙерләү һәм ауыр эштәрҙе механизациялаштырыу, шулай уҡ яңы ерҙәрҙе үҙләштереү һәм ерҙәрҙе тамырынан яҡшыртыу өсөн машиналар менән тәьмин итеү ауыл хужалығының үҫә барған талабынан артта ҡала.

1950 йылда, 1940 йыл менән сағыштырғанда, ауыл хужалығын минераль ашламалар менән тәьмин итеү байтаҡ артты.

Ауыл хужалығын күтәреүҙең сталинсе программаһын уңышлы тормошҡа ашырыуҙа машина-трактор станциялары ҙур роль уйнайылар. Улар социалистик игенселекте үҫтереүҙә государствоның бик мөһим рычагы булып торалар. МТС-тарҙың, шулай уҡ совхоздарҙың техник ҡоралланыуының үҫеүе ауыл хужалығы производствоһының механизацияһын нығ күтәреүгә, төп баҫыу эштәрен механизациялауҙың һуғышҡа тиклемге кимәлен байтаҡ уҙып китергә мөмкинлек бирҙе.

СССР Совхоздар министерствоһы совхоздарында 1950 йылда һөрөү, сәсеү һәм бөртөклө ашлыҡ йыйнауҙың 95 проценттан артығы машина көсө менән үтәлде. Был инде, совхоздарҙа баҫыу эштәрен механизациялаштырыу нигеҙҙә тамамланды, тигән һүҙ.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы (1947 йыл) бөртөклө ашлыҡ хужалығын механизациялаштырыу кимәлен күтәреү маҡсаттарында төп «бөртөклө ашлыҡ районларын, айырыуса колхоз йортона һөрөнтө ер майҙандары күп төшә торған районларҙы (Себер, Төньяҡ Ҡаҙағстан, Поволжье) тракторҙар, комбайндар, башҡа ауыл хужалығы машиналары һәм автомобилдәр менән беренсе сиратта тәьмин итеүҙе» кәрәкле тапты. Был директива биш йыллыҡ йылдарында уңышлы үтәлде. Хәҙер илдең иң мөһим бөртөклө ашлыҡ райондарында төп баҫыу эштәрен механизациялаштырыу тамамланыуға яҡын. 1950 йылда айырыуса Төньяҡ Кавказ, Поволжье һәм Көнбайыш Себер райондарында механизациялаштырыуҙың юғары кимәленә өлгәшелде.

Колхоздарҙа МТС машиналары менән үтәлә торған эштәрҙең күләме байтаҡ киңәйҙе. Төп баҫыу эштәренән башҡа, машина-трактор станциялары хәҙерге ваҡытта ағас ултыртыу, быуалар, һыу ятҡылыҡтары һәм һуғарыу селтәрҙе төҙөү, туғайҙарҙы һәм көтөүлектәрҙе яҡшыртыу, таплау һәм таҙартыу, малсылыҡ фермаларында ауыр эштәрҙе механизациялаштырыу һәм башҡалар буйынса эш алып баралар. 1950 йылда МТС-тар 170 төрләнән артыҡ эш башҡарҙылар, 1940 йылда МТС машиналары 90 төрлө генә эш башҡарғайнылар.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы күрһәтмәләрен үтәп, ижади инициатива күрһәтеп, МТС работниктәре машина-трактор паркын файҙаланыуҙы байтаҡ яҡшырттылар һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрҙеләр. 1950 йылда ауыл хужалығы эштәрен ҡыҫҡа сроктарҙа үткәреп, МТС-тар 1940 йылға сағыштырғанда, тракторҙың һәм комбайндың уртаса йыллыҡ эшләүен күтәреүгә өлгәштеләр.

Ауыл хужалығының техник ҡоралланыуының үҫеүе беҙгә игенселек культураһын нығ күтәрергә мөмкинлек бирҙе. Баҫыу һәм мал аҙығы үлән баҫыулы дөрөҫ сәсеү әйләнештәрен индереү һәм үҙләштереү буйынса эш киң күләмдәрҙә йәйелдерелде. 1950 йылда колхоздарҙа бөтә парҙарҙың һәм түңгә һөрөүҙең 90 проценттан артығыраҡы трактор һабандары менән һөрөлдө, шуның менән бергә предплужникле һабандар менән һөрөү 87 процент тәшкил итте, 1940 йылда ул 13 процент кенә ине. Ауыл хужалығы эштәренең сифаты күтәрелде, уларҙы үткәреү сроктары ҡыҫҡарҙы. Бөртөклө ашлыҡ культураларын сортлы орлоҡ менән сәсеү 64 процентҡа, ә бойҙай буйынса — 2 тапҡырға артты. Шулай булһа ла, ауыл хужалығы культураларын тотош сортлы орлоҡтар менән сәсеүгә күсеү тамамланмаған әле.

* * *

1946—1950 йылдарға биш йыллыҡ планда СССР-ҙағы бөтә продуктивле малдар һанының һуғышҡа тиклемге кимәлен уҙып китеү өсөн илдә малсылыҡты аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙе тәьмин итеү бурысы ҡуйылғайны.

Был бурыстарҙы үтәүҙә ҙур уңыштарға өлгәшелде. Общественный малдар һанын үҫтереү буйынса биш йыллыҡ план заданиеһын колхоздар арттырып үтәнеләр. Общественный малсылыҡтың үҫеш темптары юғары булыу һөҙөмтәһендә колхоздарҙа продукт биреүсе малдарҙың һәм ҡоштарҙың һаны һуғышҡа тиклемге кимәленән байтаҡ уҙып китеЛДе. 1950 йыл аҙағына колхоздарҙа, 1940 йылға ҡарағанда, мөгөҙлө эре малдар 40 процентҡа, һарыҡтар һәм кәзәләр — 63 процентҡа, сусҡалар — 49 процентҡа, ҡоштар — 2 тапҡырға артыҡ булды.

Колхоздар һуғыштан һуңғы йылдарҙа үҙ хужалыҡтарын күп тармаҡлы, һәр яҡлап алға киткән хужалыҡҡа әүерелдереү юлы буйынса үҫеүҙә алға табан ҙур аҙым яһанылар.

Колхоз общественный малсылығының йылдам үҫеүе хужалыҡтарҙың бөтә категорияларында малдар һанының тотош үҫеүенә мөмкинлек бирҙе. Колхоздарҙа, совхоздарҙа, колхозсыларҙа, яңғыҙаҡ хужалыҡтарҙа, эшселәрҙә һәм хеҙмәткәрҙәрҙә һуғыш ваҡытында нығ кәмегән продукт биреүсе малдарҙың дөйөм һаны аяҡҡа баҫтырылды һәм 1950 йылда, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 4 процентҡа, ә ҡоштар һаны — 14 процентҡа үҫте.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың общественный малсылығы үҫеүе һөҙөмтәһендә һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында илдә малсылыҡ продукттары етештереү байтаҡ артты.

Общественный малсылыҡ үҫешендәге был уңыштарҙы тәьмин итеүҙә ВКП(б) Үҙәк Комитете февраль Пленумының тарихи ҡарарҙары һәм СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты тарафынан ҡабул ителгән 1949—1951 йылдарҙа колхоз һәм совхоздарҙың продукт биреүсе общественный малсылығын үҫтереүҙең өс йыллыҡ планы тураһында ҡарар ҙур роль уйнаны. Был ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу нигеҙендә колхоздарҙа бөтә төр малдар һанының айырыуса ҙур темптар менән үҫеүенә өлгәшелде.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ йылдарында малдар өсөн торлаҡтар төҙөү бик нығ алға китте, колхоздарҙа аҙыҡ базаһы киңәйҙе. Мал аҙығы культураларының сәсеү майҙандары 1950 йылда, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 15 процентҡа артты. Ләкин был үҫеш етерлек булманы. Күп йыллыҡ үләндәр сәсеү майҙандарын арттырыу буйынса биш йыллыҡ план заданиеһе тулыһынса үтәлмәне һәм мал аҙығы етештереү малсылыҡтың үҫкән талаптарынан артта ҡала. Аҙыҡ базаһының артта ҡалыуын бөтөрөү хәҙер бөтә ауыл хужалығы органдарының, колхоздарҙың һәм МТС-тарҙың иң мөһим бурысы булып тора.

Малсылыҡты артабан тағы ла күберәк үҫтереү өсөн колхоздарҙа ҙур резервтар бар. Колхоздарға беркетелгән ерҙәрҙе файҙаланыуҙы яҡшыртыу, мал аҙығы культураларының урожайлылығын күтәреү, инә малдарҙың ҡыҫыр ҡалыуына һәм малдарҙың үләүенә ҡаршы көрәш, сусҡаларҙы ашатыу һәм малдарҙы көтөүлектәрҙә йөрөтөү эштәрен яҡшыртыу общественный малсылыҡтың яңы күтәрелеше өсөн киң перспективалар асалар. Малдарҙың продуктивлеген күтәреү өсөн дә колхоздарҙа мөмкинлектәр ҙур. Был мөмкинлектәрҙе һәр яҡлап файҙаланырға кәрәк.

* * *

1948 йылда СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты баҫыу һаҡлаусы урмандар ултыртыу, үлән баҫыулы сәсеү әйләнештәре индереү, быуалар һәм һыу ятҡылыҡтары төҙөү планын ҡабул итте. Был план уңышлы үтәлә. 1.350 мең гектар майҙанда баҫыу һаҡлаусы ағас ултыртылды һәм сәселде.

Тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороуҙың сталинсе планы һәм иптәш Сталин инициативаһы менән ҡабул ителгән коммунизмдең бөйөк ҡоролоштарын төҙөү тураһында тарихи ҡарар колхоз һәм совхоз производствоһының бөтә тармаҡтарын үҫтереү өсөн сикһеҙ перспективалар астылар. Гра[illegible] гидроэлектростанциялар һәм каналдар ҡороу бик ҙур территорияларҙа тәбиғәтте үҙгәртеп төҙөргә, ауыл хужалығы производствоһын арзанлы энергия менән тәьмин итеүгә, унар миллионлаған гектар ерҙәрҙе һуғарырға һәм һыуландырырға мөмкинлек бирер.

Биш йыллыҡ йылдарында колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыу, колхоздарҙа ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарҙы бөтөрөү буйынса ҙур эш үткәрелде; колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороуҙы яҡшыртыу һәм хеҙмәт кенәһә түләүҙе тәртипкә һалыу, артель хеҙмәтен ойоштороуҙың төп формаһы булған даими производство бригадаһын нығытыу буйынса саралар тормошҡа ашырылды; колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһы байтаҡ нығыны һәм хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде.

Колхоздарҙың общественный хужалыҡтарының үҫеүе һәм нығыуы нигеҙендә колхоздарҙың аҡса доходтары байтаҡ үҫте, совет крәҫтиәндәренең матди-культураль тормош кимәле күтәрелде.

Үткән биш йыллыҡта социалистик ауыл хужалығы квалификациялы күп кадрҙар алды. Ауыл хужалығына совхоздарҙы иҫәпләмәйенсә, юғары һәм урта белемле 160 меңдән артыҡ специалист ебәрелде. Механизатор кадрҙар әҙерләү үткәрелде. Был 2 миллионға яҡын кеше ылыҡтырылды.

1946—1950 йылдарҙа бер йыллыҡ һәм ике йыллыҡ мәктәптәрҙә, алты айлыҡ курстарҙа төрлө специальностәге 250 меңдән артыҡ колхозсы, шулай уҡ колхоздарҙың етәксе кадрҙары әҙерләнде. Бынан тыш, ҡыҫҡа сроклы курстарҙа-семинарҙарҙа һәм колхоз түңәрәктәрендә массовый агротехника һәм зооветеринария уҡыуҙарына 15,5 миллион самаһы кеше ылыҡтырылды.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты үтәү өсөн колхоздарҙа, МТС-тарҙа, совхоздарҙа, районларҙа һәм өлкәләрҙә йәйелгән социалистик ярыш ҙур әһәмиәткә эйә булды.

Ауыл хужалығы культуралары урожайының һәм малсылыҡ продуктивлегенең юғары күрһәткестәре өсөн уҙған биш йыллыҡта меңәрләгән колхозсыларға һәм ауыл хужалығы работниктарена Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Советтар Союзының ордендәре һәм медалдәре менән 100 меңдән артыҡ кеше награлданды.

Ваҡ колхоздарҙы эреләндереү социалистик ауыл хужалығының етештереү көстәренең артабан үҫеүе һәм колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу өсөн ыңғай шарттар тыуҙырҙы.

Партия социалистик игенселек работниктәрен ауыл хужалығында үҙәк бурысты хәл итеүгә — урожайлылыкты күтәреүгә, малсылыҡты һәр яҡлап үҫтереүгә һәм уның продуктивлеген күтәреүгә мобилизовать итә. Беҙҙә машина техникаһын тулыһынса файҙаланыу өсөн, общественный хужалыкты һәр яҡлап үҫтереү, уның тауарлылығын күтәреү өсөн бөтә ыңғай шарттар тыуҙырылғандар.

Ленин — Сталин партияһы ауыл хужалығы үҫешенә яңы һайын юнәлеш бирә, колхоз крәҫтиәндәрен, МТС һәм совхоз работниктәрен ауыл хужалығы продукттары муллығын булдырыуға, коммунизм өсөн көрәштә яңы еңеүҙәргә рухландыра.

Большевиктар партияһы етәкселегендә, бөйөк Сталин юлбашсылығында колхоз крәҫтиәндәре бөтә совет халҡы менән бергә социалистик Тыуған ил хаҡына, илебеҙҙә коммунизмдең тулы еңеүе хаҡына фиҙакәр хеҙмәт итәләр.

Г. ВЛАСОВ.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партия ойошмаһы илгә күберәк туҡыма биреү өсөн көрәшә

Өфө киже-мамыҡ комбинатының партия ойошмаһы коллективты производство планын уңышлы үтәүгә мобилизовать итеү өсөн күп кенә ойоштороу һәм партия-политик эштәр үткәрә. Шул арҡала комбинат коллективы валовой продукция етештереү буйынса 1950 йыл планын 11 декабргә үтәүгә өлгәште, ә бөтә производство планының үтәлеше йыл аҙағына 108,1 процентҡа етте.

Производствола коммунистар һәм комсомолецтар алдынғы сафта баралар. Уларҙың күбеһе продукция етештереүҙең уңышын хәл итә торған иң яуаплы участкаларҙа эшләйҙәр һәм үҙ нормаларын һәр ваҡыт арттырып үтәйҙәр. Мастер ярҙамсыларынан Әминов һәм Александров иптәштәр эш нормаларын 150-шәр процентҡа; туҡыусы иптәш Маркова 117—140 процентҡа үтәйҙәр; еп иләүсе иптәш Буткина 600 орсоҡ урынына 864 орсоҡто хеҙмәтләндереп, үҙ нормаһын 124 процентҡа еткереп үтәй. Слесарҙарҙан иптәш Сергеев айлыҡ нормаһын 258 процентҡа үтәп, иң яҡшы сифатлы продукция бирә.

Партия ойошмаһы стахановсыларҙың эш тәжрибәләрен дөйөмләштереп, уны таратыуға һәм коллективты комбинат алдында торған мөһим бурыстарҙы үтәүгә мобилизовать итеүгә ҙур иғтибар бирә. Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, продукцияның үҙенә төшәү хаҡын кәметеү, сифатын яҡшыртыу өсөн көрәш партия ойошмаһының һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә тора. Февралдә үткәрелгән партия ойошмаһының асыҡ йыйылышында комбинаттың эшендә рентабеллек булдырыу тураһындағы мәсьәлә ҡаралды. Был өлкәлә урын алған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн партия ойошмаһы күп кенә саралар билдәләне һәм коллектив алдына 1951 йылда хеҙмәттә яңы уңыштарға өлгәшеү бурысын ҡуйҙы.

Комбинатта оборудование[illegible] тик һаҡлыҡҡа алыу буйынса алып барыла. Стахановсы[illegible] Гәрәева, Исламгәрәева, Бутыҡ[illegible] һәм тигеҙләүселәрҙән Хакимов[illegible] һәм башҡа иптәштәр үҙҙә[illegible] станоктарҙы социалистик һаҡл[illegible] дылар.

Инженер коммунист иптәш Ис[illegible] тең тәҡдиме буйынса комбинатт[illegible] туҡыу станогының эшенә конт[illegible] алып барыу ойошторолдо. С[illegible] алынған продукцияның һаны һ[illegible] һайын яҙып эләп ҡуйыла. Быны[illegible] иҫәп алып барыу социалистик [illegible] көсөн тағы ла арттырҙы һә[illegible] етештереүсәнлеген 5 процентҡа [illegible]

Иваново ҡалаһындағы Бутус[illegible] мендәге туҡыу фабрикаһының [illegible] ны тулыһынса файҙаланыу [illegible] листик ярыш башланғысы, ойошмаһының инициативаһы [illegible] эшселәр йыйылышында тикшере[illegible] был башланғысҡа ҡушылыу [illegible] ҡарар ҡабул ителде.

Инженер коммунист Моталов [illegible] тәҡдиме буйынса орсоҡтоң [illegible] диаметрын үҙгәртеү иҫәбенә, уралған епте оҙонлоҡон арттыр[illegible] ды индерелде. Был сара машина[illegible] тороу ваҡытын кәметергә һә[illegible] участкаларҙа эшселәргә үҙҙәренең етештереүсәнлеген 50 процентҡа күтәрергә мөмкинлек бирә.

Шулай итеп, беҙҙең комбинатта[illegible] тия ойошмаһы массовый-полити[illegible] ойоштороу эштәрен йәйелдереп [illegible] нән 1951 йыл планын барлыҡ [illegible] экономик күрһәткестәр буйынса ла [illegible] рып үтәүгә коллективты мобилизо[illegible] итеү өсөн көрәшә.

А. Кондрат[illegible]

Өфө киже-мамыҡ комбинат[illegible] партия ойошмаһы секретар[illegible]

Яуаплы осор

ВКП(б)-ның Жданов райкомы быйыл коммунистарҙың һәм партияһыҙ кадрҙарҙың политик уҡыуҙарын ойоштороуға сербез иғтибар бирҙе.

Быйыл партия мәғарифе селтәрендә уҡыуҙар айырыуса ойошҡанлыҡ менән башланды. Уҙған йылда политик мәктәптәрҙә һәм түңәрәктәрҙә уҡыусыларҙың һаны 4354 кеше булһа, 1950 — 1951 уҡыу йылында инде уларҙың һаны 4626 кешегә етте. Ошо кешеләрҙе эсенә алған 193 политик мәктәп һәм түңәрәк ойошторолдо. Шуларҙан 41 урында ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү буйынса юғарылатылған типтағы һәм 100 урында төп типтағы өйрәнеү түңәрәк, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 12 түңәрәк һәм 37 политик мәктәп ойошторолдо. Былардан тыш 391 кеше марксизм-ленинизмдең киске университетында уҡый һәм 1018 кеше үҙ алдарына өйрәнә.

Хәҙер политик мәктәптәрҙә һәм түңәрәктәрҙә йомғаҡлау занятиеларына әҙерләнеп бара. Партия мәктәптәрендәге һәм түңәрәктәрендәге быйылғы йомғаҡлау занятиелары, уҙған йылғы сағыштырғанда, ойошҡанлыраҡ үтәсәк.

Шуға күрә был занятиеларҙы уңышлы үткәреү партия ойошмаларының мөһим бурысы булып һанала. Политик уҡыуҙарҙы уңышлы тамамлау маҡсатында, ВКП(б)-ның район комитеты махсус график төҙөнө. Партия ойошмалары секретарҙәре һәм райком пленумы ч[illegible] нең кәңәшмәләре, пропагандист һә[illegible] сультанттарҙың семинарҙары үт[illegible]

Партияның төүгө ойошмаларын[illegible] тия йыйылыштарҙа уҙғарылып, [illegible] уҡыу йылын тамамлауға әҙерлек [illegible] лары тураһындағы мәсьәлә тикш[illegible] Мәҫәлән, телефон аппараттары һә[illegible] заводтарҙың партия ойошмалары [illegible] уҡыуҙарға ҡағылған бөтә мәсьәл[illegible] ҡаранылар, цех партия ойошмалар[illegible] бюроларҙа һәм партия-комсомол [illegible] уҡыу селтәрҙәренең пропагандисты [illegible] нан беседалар уҙғарҙылар.

Хәҙер күп кенә партия ойошмал[illegible] да консультациялар һәм үткән мат[illegible] дарҙы ҡабатлау киң йәйелдерел[illegible] ғаҡлау занятиеларына әҙерләнеү [illegible] ойоштороуҙа пропагандистарға айыру[illegible] яуаплы бурыс йөкмәтелә. Уларҙы [illegible] сы үткән йылғы хаталарҙы ҡабатла[illegible] ҙан, йомғаҡлау занятиеларын ойош[illegible] итеп үткәреүҙән тора.

Үҙ алдарына өйрәнеүселәр мене[illegible] ғаҡлау беседаларын үткәреүгә әҙер[illegible] мәсьәләләре лә райкомдың иғтибар[illegible] гендә тора.

Шик юҡ, беҙҙең партиялы һәм п[illegible] һыҙ большевиктәребеҙ политик уҡыу[illegible] ҙы уңышлы тамамлаясаҡтар.

С. Пыл[illegible]

ВКП(б)-ның Жданов райкомы [illegible] тия кабинеты мөдире.

Агитатор—социалистик ярышты ойоштороусы

Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһенең партия ойошмаһы эргәһендәге агитколлектив 32 агитаторҙан тора. Уларҙың 22-һе — коммунист. 16 кеше турананан-тура производствола эшләй. Бөтә агитаторҙар ҙа автоколонналарға һәм ремонт мастерскойҙарына беркетелгәндәр. Партбюро агитаторҙар өсөн айна һайын семинар үткәрә. Семинарҙа агитаторҙар беседа үткәреү өсөн билдәләнгән нәүбәттәге темаға лекция тыңлайҙар һәм үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар. Беҙҙең беседаларҙың тематикаһы күп төрлө була һәм уларҙың күбеһе алдынғы эш методтарын урталаштырыуға арнала.

Беҙ производствола алдынғы эш методтары буйынса эшләүсе кешеләрҙең һанын арттырыу өсөн киң агитация алып барабыҙ. Беҙҙең автопаркта бик күп машиналар техник эксплуатация срогын үткәндәр. Шуға ҡарамаҫтан, агитацион-массовый эште киң йәйелдереү нигеҙендә, машиналарҙы артабан эксплуатациялауҙы дауам иттерергә һәм планды арттырып үтәүгә өлгәшергә тырышабыҙ.

Бер семинарҙа беҙ техниканы тулыһынса файҙаланыу буйынса Мәскәү ҡалаһының «Компрессор» заводы профгруппорғы Анатолий Потаповтың оборудованиеларҙы юғары етештереүсәнлеге өсөн ярыш ойоштороу тураһындағы патриотик башланғысы буйынса фекер алыштыҡ. Һуңынан һәр бер агитатор ошо темаға беседа үткәрҙе. Һөҙөмтәлә 80-дән артыҡ шофер үҙҙәренең машиналарын социалистик һаҡлыҡҡа алды, шулай уҡ капиталь ремонтһыҙ 100 мең километр юл үтергә һәм, 1950 йылға ҡарағанда, 10-15 процентҡа артығыраҡ йөк ташырға һүҙ бирҙе.

А. Потапов методын индереү буйынса мин механика цехында агитация эше алып барам. Бының өсөн «Труд» г[illegible] һындағы А. Потаповтың башланғысы [illegible] һындағы мәҡәләне уҡып, өйрәнеп, мастеры иптәш Любовицкий мене[illegible] лектә, социалистик ярыш ойоштор[illegible] буйынса конкрет саралар билдәләне[illegible] нан һуң мин токарҙар һәм фрезеро[illegible] тәр менән беседа үткәрҙем. Минең ағи[illegible] тәрсә һөйләшеү тәртибендә үткәреп[illegible] ларым эштәгә күп кенә етешһеҙлектәр[illegible] ҙе асырға мөмкинлек бирҙе. Партбюро [illegible] профсоюз комитеты етешһеҙлектәрҙе [illegible] рәүҙә миңә ярҙам иттеләр.

Практик эш менән агитацияны [illegible] бәйләп алып барыу арҡаһында мин [illegible] токарҙарҙың һәм фрезеровщиктарҙың [illegible] циалистик ярышҡа ҡушылыуына өлг[illegible] тем. Улар барыһы ла станоктарҙы, инструменттарҙы социалистик һаҡлыҡ[illegible] алырға, март, апрель айҙарына ҡара[illegible] ла майҙа станоктарҙы эксплуатация[illegible] лау срогын 15 процентҡа оҙайт[illegible] һәр бер станоктан продукция алыуҙ[illegible] процентҡа күтәрергә, металды тырыш[illegible] бер процентҡа экономия яһарға һәм [illegible] иң яҡшы сифатлы ғына продукция ет[illegible] тереүгә йөкләмә алдылар. Шул уҡ [illegible] ҡытта алдынғы эшселәр артта ҡалыу[illegible] ларға ярҙам итергә һүҙ бирҙеләр.

Даими рәүештә маҡсатҡа йүнәл[illegible] итеп үткәрелә барған беседаларҙың һ[illegible] тәләре көндән-көн асығыраҡ күренә[illegible] ҙы. Хәҙер цехта бөтә эшселәр ҙә нормал[illegible] рын үтәйҙәр һәм арттырып үтәйҙәр. [illegible] карҙарҙан Романенко, Паляров, Долг[illegible] һәм башҡа иптәштәр смена нормалар[illegible] ике тапҡырға арттырып үтәй башла[illegible] лар.

И. Прокофье[illegible]

Туймазы территориаль төҙөлөш [illegible] равлениеһенең автотранспорт кон[illegible] раһы агитаторы.

Япония менән ярашыу договоры тураһындағы мәсьәлә буйынса Ҡытай Халҡ Республикаһы Хөкүмәтенең нотаһы

Отө йылдың 22 майында СССР-ҙың Ҡытай Халҡ Республикаһындағы Посолы Н. В. Рощин Ҡытай Халҡ Республикаһының Сит ил Эштәре Министры Чжоу Энь-лайға Япония менән ярашыу договоры турлыһындағы мәсьәлә буйынса нота алды. Түбәндә нотаның тексы иғлан ителә.

«Посол әфәнде,

Америка Ҡушма Штаттары хөкүмәтенә Совет Хөкүмәте нотаһының күсермәһен СССР-ҙың Ҡытайҙағы посольствоһы аша Ҡытай Халҡ Республикаһы Үҙәк Халҡ Хөкүмәте Сит Ил Эштәре Министрлығының 9 майҙа алыуы тураһында һеҙгә [illegible] менән хәбәр итәм. Был нотала Япония менән ярашыу договоры турлыһында АҠШ проекты буйынса СССР Хөкүмәтенең фекер ҡарашы әйтелә. [illegible]

Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте, Япония менән ярашыу договоры турлыһында АҠШ проектына ҡарата СССР Хөкүмәтенең фекер ҡарашы [illegible]

[illegible]

1. Япония менән ярашыу договоры [illegible]

[illegible]

Ҡытай Халҡ Республикаһы 1950 йылдың 4 декабрендәге белдереүендә, 1947 йылдан алып Ҡушма Штаттар Хөкүмәте Япония менән ярашыу договоры төҙөү процедураһын [illegible]

1931 йылдың 18 сентябрендә япон империализмы ҡоралы көс менән беҙҙең [illegible]

Ләкин АҠШ хөкүмәте [illegible] бер ваҡытта Ҡытай Халҡ Республикаһын — Ҡытай халҡының берҙән-бер законлы вәкилен Япония менән ярашыу договорын әҙерләү эшенә ҡатнаштырмаҫҡа маташып килә, был Ҡытай халҡын ың ҙур хурлау булып тора, ул был хурлыҡҡа бер нисек тә сыҙай алмай. Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте [illegible]

[illegible]

2. Япония менән ярашыу договорының Америка проектының йөкмәткеһе мәсьәләһенә килгәндә, [illegible] 1943 йылғы Каир декларацияһы, 1945 йылғы Потсдам декларацияһы [illegible]

[illegible] Японияның милитаризмын [illegible] хаҡына ярашыу договорына [illegible] ... ла тергеҙеп булмай [illegible] Японияны демократизациялауға ярҙам итеү менән генә сикләнә. Америка оккупацион властары Японияла үткәргән политика [illegible] бер нисек тә булһа ла [illegible] һаҡлап алып ҡалыу [illegible] Японияны демократизациялауға [illegible] тора, шуға күрә [illegible] әйтелгән халыҡ-ара килешеүҙәр менән бер ниндәй уртаҡлығы юҡ [illegible] булып тора. Юғарыла [illegible] халыҡ-ара килешеүҙәрҙә Тайвань һәм Пескадор утрауҙарын Ҡытайға [illegible] Кореяға азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ бирелеү ҙә бер үк дәрәжәлә теркәлгән. Ләкин АҠШ [illegible] уның территорияһын, [illegible] һәм кеше резервтарын файҙаланып, Кореяға [illegible] баҫып инеүҙе һәм беҙҙең [illegible] законһыҙ ҡоралы оккупацияһын [illegible]. АҠШ хөкүмәтенең [illegible] проекты тап был [illegible] ғәмәлдә законһыҙ [illegible] законлаштырырға маташыу [illegible]

Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк [illegible] 1950 йыл 4 декабрҙәге [illegible] ук. Тайванды һәм Пескадор утрауҙарын Ҡытайға ҡайтарып [illegible] декларацияһында уҡ инде тергеҙелгән [illegible] хәл ителгән территориаль [illegible] яңынан тикшереү [illegible] ҙә нигеҙлек юҡ, тип [illegible]

[illegible] хөкүмәте проектында [illegible] Пескадор утрауҙарын бирәсәге [illegible] Японияның баш тартыуына әйтелә, ундә Тайвань һәм Пескадор утрауҙарын Ҡытайға [illegible] бирелеүгә ҡарата бер генә [illegible]

[illegible] хөкүмәтенең беҙҙең Тайванды [illegible] законһыҙ оккупацияларға [illegible] хәрби базаға әүерелдереп, Ҡытай Халҡ Республикаһына ҡаршы агрессия [illegible] ҙур яһарға ынтылыуы [illegible]

[illegible] Рюкю (Рюкю) утрауҙары, [illegible] (Бонин) утрауҙары, [illegible] (Волкано) утрауҙары, [illegible] (Маркус) утрауы, Сичжилао [illegible] һәм Чжунчжиниолао [illegible] утрауы Америка тарафынан [illegible] ҡуйылған опека системаһына инергә тейештәр, тип Союзный державалар араһындағы халыҡ-ара килешеүҙәрҙең береһендә лә теркәлмәгән.

Ә АҠШ хөкүмәте юғарыла күрһәтелгән утрауҙарға Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының опекаһын урынлаштырыу һылтауы аҫтында был утрауҙарҙы АҠШ ида-

раһына тапшырыу, йәғни улар [illegible] мәсьәләне [illegible]

[illegible]

Бындай булмыуына, [illegible]

[illegible] АҠШ хөкүмәте Америка ғәскәрҙәренең Японияны законһыҙ оккупациялауын легаллаштереү һәм Японияны оҙаҡ дауам иткән оккупация статуты аҫтына ҡуйырға ынтыла.

Бынан шуны күрергә мөмкин, Япония менән ярашыу договорының АҠШ хөкүмәте проекты, уның йөкмәткеһенә ҡарағанда, Японияға ҡаршы һуғышта Союзный державаларҙың маҡсаттарына тулыһынса ҡапма-ҡаршы килә, Япония тураһында Союзный державаларҙың халыҡ-ара килешеүҙәрен ҡаҡшата, Союзный державаларҙың интерестәренә зыян килтерә, япон халҡының ихтыярын боҙа. АҠШ хөкүмәте ярашыу договорының был проектында тик бер генә төп маҡсатты Азия илдәренә ҡарата үҙенең агрессив хәрәкәттәрен дауам иттереү һәм киңәйтеү өсөн япон милитаризмын ҡайтанан тыуҙырыу маҡсатын ғына күҙҙә тота, был, милитаристик Япония агрессияһының үҙ өҫтөндә кисергән Ҡытай халҡы һәм Азияның йөҙәр миллионлаған кешеләре өсөн бөтөнләйгә сыҙап торғоһоҙ хәл булып тора.

3. Япония менән ярашыу договорын әҙерләүгә ҡарата Совет Хөкүмәте индергән конкрет тәҡдимдәрҙе Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте тулыһынса хуплай һәм яҡлай.

Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте, СССР Хөкүмәте кеүек үк, һәр ваҡытта Япония тураһында Союзный державаларҙың иң мөһим халыҡ-ара килешеүҙәре — Каир декларацияһы, Ялта килешеүе һәм Потсдам декларацияһы нигеҙендә мөмкин тиклем ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Япония менән дөйөм ярашыу договорын төҙөргә, шул уҡ ваҡытта Япония менән ярашыу договорының проекты дүрт держава — СССР, Ҡытай Халҡ Республикаһы, АҠШ һәм Англия вәкилдәре тарафынан, Алыҫ Көнсығыш комиссияла член булған бөтә илдәр ҡатнашлығында ҡаралырға тейеш тип талап итеп килде. Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте, АҠШ хөкүмәте 1947 йылдан уҡ Япония менән бөтә яҡлы ярашыу договорын төҙөүҙе һүҙырға бер нисә тапҡыр маташты, ә 1950 йылдан алып, Япония менән бөтә яҡлы ярашыу договорын төҙөүҙе күп тапҡырҙар әҙәп, Япония менән ярашыу договорҙары буйынса сепаратив хәрәкәттәр яһай, тип бер нисә тапҡыр асыҡтан-асыҡ күрһәткәйне инде.

Дуҫлыҡ, союз һәм үҙ-ара ярҙам тураһында 1950 йылдың 14 февралендә төҙөлгән Ҡытай-Совет договорында, Япония менән бөтә яҡлы ярашыу договорын төҙөү бурысын тормошҡа ашырыуҙы тәьмин итеү өсөн, Ҡытай һәм СССР «үҙ-ара килешеү тәртибендә икенсе бөтә донъя һуғышы ваҡытында союздаш булған башҡа государстволар менән берлектә Япония менән ярашыу договорын мөмкин тиклем ҡыҫҡа ваҡыт эсендә төҙөүгә өлгәшергә йөкләмә алалар», тип асыҡтан-асыҡ теркәлгән.

Ҡытай халҡы япон милитаризмын ҡайтанан тыуҙырыуға ҡырҡа ҡаршы килә, шул уҡ ваҡытта япон халҡының тыныслыҡҡа, демократияға һәм государство бойондороҡһоҙлоғона ынтылышын тулыһынса яҡлай. Ҡытай халҡы, бойондороҡһоҙ, демократик, тыныслыҡ һөйәүсе Япония, сит ил йоғонтоһонан азат булған Япония Азияла һәм бөтә донъяла тыныслыҡтың мөһим факторы булыр ине, тип тәрән ышана. Шуға күрә Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте СССР Хөкүмәте тарафынан күрһәтелгән һәм Каир, Потсдам декларацияларына һәм Ялта килешеүенә нигеҙләнгән, Япония менән ғәҙел, аҡыллы ярашыу договорын төҙөүҙә күҙҙә тоторға тейеш булған биш төп маҡсат менән тулыһынса килешә, атап әйткәндә:

«А. Япония тыныслыҡ һөйәүсе, демократик, бойондороҡһоҙ государство булырға тейеш;

Б. Япония халҡына демократик хоҡуҡтар тәьмин ителергә тейеш һәм политикмы, хәрбиме йәки хәрбилаштерелгәнме булыуҙарына ҡарамаҫтан, Италия менән ярашыу договорында күҙҙә тотолғанынса, халыҡты демократик хоҡуҡтарҙан мәхрүм итеү маҡсатын тотҡан ойошмаларҙың йәшәүенә юл ҡуйылмаҫҡа тейеш;

В. Япон милитаризмын ҡайтанан тыуҙырыуға ҡаршы гарантия сифатында договорҙа Япония ҡоралы көстәренең күләменә сикләү урынлаштырылырға тейеш, был күләм, Италия менән ярашыу договорында билдәләнгәненсә, үҙенсә оборонлау талаптарынан уҙып китмәҫкә тейеш;

Г. Японияға уның тыныс экономикаһын үҫтереү эшендә бер ниндәй ҙә сикләүҙәр ҡуйылмаҫҡа;

Д. Японияның башҡа государстволар менән сауҙа итеүенә ҡарата бөтә төр сикләүҙәр алынаҫаҡ».

Юғарыла күрһәтелгән төп маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙы конкрет тәьмин итеү өсөн Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте Японияға Союзный державаларҙың теләһә ҡайһыһына ҡаршы йүнәлтелгән коалицияға инеүҙе тыйыуға ҡарата положение теркәлергә тейеш, бөтә оккупацион ғәскәрҙәрҙең Япония менән ярашыу договоры төҙөлгәндән һуң бер йылдан да һуңламайынса Японияның сығарылыуҙарына ҡарата, бер генә государствоға ла Японияла үҙенең ҡоралы көстәрен йәки хәрби базаларын ҡалдырырға рөхсәт ителмәүгә ҡарата һәм Япония менән ярашыу договорына ҡул ҡуйған государстволарҙың Японияның Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына инеүе мәсьәләһендә уны бергәләп яҡларға тейеш булыуҙарына ҡарата положениеларҙың ярашыу договорында теркәлергә тейеш булыуы хаҡында СССР Хөкүмәтенең тәҡдимдәре менән тулыһынса килешә һәм уларҙы яҡлай.

Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте һәр ваҡытта Япония тураһындағы мәсьәләне тыныс юл менән яйға һалыу Алыҫ Көнсығыштағы хәҙерге проблемаларҙы хәл итеүҙә мөһим звено булып тора, ә Япония менән бөтә яҡлы ярашыу договорын төҙөү эше хәҙер инде киҫкентергеһеҙ характер алды, тип иҫәпләп килде. Бынан сығып, Ҡытай Халҡ Республикаһының Үҙәк Халҡ Хөкүмәте Советтар Союзы Хөкүмәтенең, «1951 йылдың июнендә йәки июлендә АҠШ, Ҡытай, Великобритания һәм СССР вәкилдәре составында Япония менән ярашыу договорын әҙерләүгә башлау өсөн сит ил эштәре министрҙары Советының сессияһын саҡырырға, Япония менән ярашыу договорын төҙөү буйынса әҙерлек эштәренә үҙҙәренең ҡоралы көстәре менән Японияға ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан бөтә государстволарҙың вәкилдәрен йәлеп итеүҙә күҙҙә тоторға, ярашыу договорының проектын ярашыу конференцияһы ҡарамағына тапшырырға өлгәшергә», тигән тәҡдиме менән тулыһынса килешә.

Ваҡиғанан файҙаланып, мин, Посол әфәнде, һеҙгә, үҙемдең тәрән хөрмәтемде белдерәм.

КХР сит ил эштәре министры
ЧЖОУ ЭНЬ-ЛАЙ.

22 май, 1951 йыл, Пекин ҡалаһы», (ТАСС).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ

Төҙөлөштәрҙең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу өсөн

Үткән йылдың май айында СССР Министрҙар Советы төҙөлөштәрҙең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу тураһында мөһим ҡарар ҡабул иткәйне. Ҡарарҙа төҙөлөш эштәрендә булған серьез етешһеҙлектәр күрһәтеп үтелә һәм төҙөлештең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу буйынса конкрет саралар билдәләнә.

Республикабыҙҙың был мәсьәләгә бөтә серьезлығы менән ҡараған ойошмалары үҙ эштәрендә байтаҡ уңыштарға өлгәштеләр. Коммуналь банк тарафынан контроллек ителгән туғыҙ ойошманың алтыһы үткән йылды яҡшы күрһәткестәр менән тамамланы. Мәҫәлән, Өфө ҡала Советы исполкомының юл-күперҙәр төҙөү управлениеһе (начальнигы иптәш Ф. Твердюков) төҙөлөш хаҡын арзанайтыу һөҙөмтәһендә 364 мең һум, Сантехконтора (начальнигы иптәш Шишков) 112 мең һум һәм ремонт конторалһы 212 мең һум экономия бирҙеләр.

Төҙөлөш планын 17 процентҡа арттырып үтәгән юл-күперҙәр төҙөү управлениеһе тик накладной расходтарҙы ҡыҫҡартыу һөҙөмтәһендә генә 123 мең һум экономия яһауға өлгәште. Был управлениеның бөтә производство процестәре механизациялаштырылған. Управлениеның инженер-техник работниктәре ҡиммәтле төҙөлөш материалын икенсе ҡушымталы материал менән алмаштырып, яҡшы инициатива күрһәттеләр. Быны ҡулланыу төҙөлә торған юлдарҙың сифатын кәметмәйенсә, средстволарға байтаҡ экономия яһарға мөмкинлек бирә.

Ләкин күп кенә төҙөлөш ойошмаларында төҙөлөш эштәренең үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу өсөн ныҡлы көрәш алып барылмай. Мәҫәлән, «Башстрой» тресы (управляющийе иптәш Конкин) үткән йылда төҙөлөш эштәрен 582 мең һумға, «Коммунстрой» тресының 18-се номерлы төҙөлөш ойошмаһы 123 мең һумға ҡиммәтләндереүгә юл ҡуйҙылар. Ҡала торлаҡ-коммуналь төҙөлөш тресында ла төҙөлөштөң үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу өсөн көрәш йомшаҡ ҡуйылған.

Бында, төҙөлөш хаҡтарының ҡиммәтләнеүендә төп сәбәп — төҙөлөш пландарының срогында үтәлмәүендә тора. Шуны ғына күрһәтеп үтеү ҙә етә, «Башстрой» тресы үткән йылда планды 25 процентҡа үтәп еткермәне, йөҙҙәрсә мең һум государство средствоһын артыҡ тотто. 18-се номерлы төҙөлөш ойошмаһы үҙ ғына йылдың планын ни бары 47 процентҡа үтәне, шуның һөҙөмтәһендә административ-хужалыҡ персоналына 70 мең һумдан артыҡ расход сығарыуға юл ҡуйҙы.

Быйыл да эш яҡшы түгел. Төҙөлөш ойошмалары ағымдағы йылдың эш планын үтәүҙә еңәйтелгән рәүештә өҙәләр.

Шуның арҡаһында улар төҙөлөш эштәренең хаҡтарын, үткән йылғыға ҡарағанда, быйыл тағы ла ҡиммәтләндерҙеләр. Бигерәк тә «Башстрой» тресы, 18-се номерлы төҙөлөш ойошмалары хаҡты күтәрҙеләр.

Төҙөлөш ойошмаларының финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеген өйрәнеү хөкүмәт ҡарары нигеҙендә төҙөлөш эштәрен арзанайтыу өсөн был ойошмалар тарафынан практик саралар үткәрелмәүен күрһәтәләр. «Башстрой» һәм «Горжилкоммунстрой» трестарының төҙөлөштөң үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыу буйынса эшләнгән ойоштороу-техник саралар планы тик ҡағыҙҙа ғына ҡалды.

Мөмкинлектәрҙе дөрөҫ һәм тулыһынса файҙаланмау ҙур зыян килтерә. Шулай, үткән йылда «Башстрой» тресы автопаркты рациональ һәм тулы файҙаланмау һөҙөмтәһендә 62 мең һум зыян күрҙе. Водопровод төҙөлөшөндә башҡарылған эштең сифаты түбән булыу сәбәпле, был трест ҡайһы бер эштәрҙе яңынан башҡарырға, бының өсөн артыҡ средство һәм эшсе көс һалырға мәжбүр итте. Ошондай хужаһыҙлыҡтан ул хеҙмәт хаҡы буйынса 42 мең һум средствоны артыҡ тотоуға юл ҡуйҙы.

Төҙөлөш эштәрен механизациялаштырыу хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә, төҙөлөштәрҙең сроктарын ҡыҫҡартыуҙа һәм үҙенә төшөү хаҡтарын арзанайтыуҙа мөһим фактор булып торғанлығы һәр кемгә билдәле. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, 18-се номерлы төҙөлөш ойошмаһында ла, «Горжилкоммунстрой» тресында ла механизацияның әһәмиәтен аңлап еткермәйҙәр. Юҡ иһә 18-се номерлы төҙөлөш ойошмаһы эштәрҙе механизациялаштырыуға ебәрелгән 165 мең һум средствоны файҙаланған һәм водопровод төҙөлөшөндә ер эштәрен башҡарыуҙы механизациялаштырған булыр ине.

«Горжилкоммунстрой» төҙөлөш техникаһы (күтәреү механизмдәре, бетон болғатҡыстар һәм башҡалар) менән етерлек тиклем тәьмин ителгән. Ләкин улар хәстәрлек күрелмәү арҡаһында хәрәкәтһеҙ, тутығып яталар.

«Башстрой», «Горжилкоммунстрой» трестары һәм 18-се номерлы төҙөлөш ойошмаһы етәкселәренә был серьез кәмселектәрҙе йылдам бөтөрергә, төҙөлөш хаҡтарын арзанайтыу тураһында хөкүмәттең ҡарарын аныҡ үтәргә бик ваҡыт инде. Төҙөлөш ойошмаларының производство-техник, хужалыҡ һәм финанс эшмәкәрлеген ҡырҡа яҡшыртыуға өлгәшергә кәрәк.

М. Синякин,
комбанктың Башҡортостан конторалһы бүлеге начальнигы.

Башҡорт АССР-ы МТС-тарында комбайндар ремонтлауҙың барышы

(План үтәлеше, 1951 йылдың 25 майына, процентттарҙа).

Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған	Тотҡан урыны	МТС-тар	Ремонтланған
1	Дәүләкән	100	48	Туҡмаҡлы	33	95	Стәрлебаш	19
2	Шаранбаш-кнәз	80	49	Шланлы	33	96	Пугачев	18
3	Благовар	75	50	Аслыкүл	32	97	Йәрмәкәй	18
4	Теләкәй	66	51	Хоҙайбирҙин	32	98	Бүздәк	17
5	Октябрьский	65	52	Дмитриевка	32	99	Учалы	16
6	Баймаҡ	57	53	Стәрлетамаҡ	31	100	Иглин	16
7	Матрай	57	54	Ҡуш-Йылға	30	101	Ҡарыш	16
8	Суҡкүл	57	55	Хәйбулла	30	102	Божор	15
9	Подгорный	55	56	Кушнаренко	30	103	Мәсетле	15
10	Имәнлекүл	53	57	Йәркәй	30	104	Ҡалмыҡ	14
11	Янауыл	53	58	Өрйәҙә	30	105	Охлебинин	14
12	Сыңташтамаҡ	52	59	Нуриман	30	106	Шишмә	14
13	Кундрак	50	60	Базан	28	107	Забельск	13
14	Ҡарамалы Ғөбәй	47	61	Федоровка	28	108	Ҡандра	13
15	Саҡмағош	45	62	Дүртөйлә	27	109	Сермән	12
16	Усть-Икин	43	63	Булгак	26	110	Орлов	12
17	Ишле	42	64	Һужайлы	26	111	Моторный	12
18	Емаш	42	65	Ермолаевка	25	112	Асҡын	12
19	Ҡырмыҫҡалы	41	66	Ташлыкүл	25	113	Бәрә	11
20	Маҡар	41	67	Бәиш	25	114	Байҡы	11
21	Андреевка	40	68	Чурай	25	115	Покровка	11
22	Рәжәп	40	69	Ҡорәс	25	116	Әбдрәзәк	10
23	Ямады	40	70	Балтач	24	117	Шарап	10
24	Белоҡатай	40	71	Күрҙем	24	118	Мрәсем	8
25	Аксен	40	72	Сибай	23	119	Уҫлы	8
26	Бишбүләк	40	73	Приют	23	120	Мишка	7
27	Еләр	40	74	Арслан	23	121	Усень-Ивановка	7
28	Н-Троицк	40	75	Таймас	22	122	Ергән	7
29	Ҡарламан	39	76	Йылайыр	22	123	Михайловка	7
30	Петровск	39	77	Улай	22	124	Әлмөхәмәт	5
31	Яңьегет	38	78	Дүрәс	22	125	Полянск	5
32	Суйынсы	37	79	Шаран	22	126	Архангель	5
33	Һурән	37	80	Бишенде	22	127	Таутаман	4
34	Байғужа	37	81	Ҡасау	21	128	Малояз	4
35	Степной	37	82	Ҡарирҙел	21	129	Тәтешле	4
36	Туймазы	37	83	Ерәкле	21	130	Баҡалы	4
37	Ҡузәй	36	84	Миякә	20	131	Әбдрәшит	3
38	Шарип	36	85	Әбйәлил	20			
39	Ҡыйғы	36	86	Урмияҙа	20			
40	Колхозников	35	87	Бәләбәй	20			
41	Подлуб	34	88	Аит	20			
42	Тиллы	34	89	Языково	20			
43	Борай	34	90	Мәләүез	20			
44	Мәсәғүт	34	91	Күгәрсен	19			
45	Абзан	33	93	Һаҡмар	19			
46	Мраҡ	33	93	Ярослав	19			
47	Ҡалтасы	33	94	Арҡауыл	19			

*/ МТС-тарҙың тотҡан урындары комбайндарҙы ремонтлау пландарын үтәүҙәренә ҡарап билдәләнә. Байрамғол, Бурлы, Дыуаш, Краснохолм, Оло Теләк, Степановка, Һары күл, Чапаев һәм Яңы Ҡайын МТС-тары бер төргә лә үтәлеш бирмәнеләр.

Картоф ултыртыу тамамланды

«Өршәк» һәм Цюрупа совхоздары картоф ултыртыу планын 23 майға тулыһынса үтәнеләр.

Цюрупа совхозында 345 гектар һәм «Өршәк» совхозында 210 гектар майҙанда элит сортлы картоф ултыртылды. Эш юғары агротехник кимәлдә үткәрелде.

Ғ. Хәбибуллин.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Ҡала ситендәге урамдарҙа юлдар төҙөкләндерелергә тейеш

Республикабыҙҙың башҡалаһы — Өфө йылдан-йыл төҙөкләндерелә, матурлана бара. Урамдар асфальт менән ҡаплана, ағастар ултыртыла. Тыуған ҡаланың матурлығы менән уның һәр бер гражданы ғорурлана.

Ләкин әле ҡаланың ситтәрәк булған ҡайһы бер урамдарҙың төҙөк хәлгә килтерелеп еткерелмәүе бер яҡ тиклем йөрөй төшә.

Бына Достоевский урамы буйлап беренсе номерлы совет больницаһына тиклем үтәбеҙ. Ҡала юл бүлегенең юлдарҙы ремонтлауға иғтибар бирмәүе арҡаһында килгәндә артығыраҡ юл бөтөнләй йөрөрлек хәлгә килгән. Водопровод үткәреү менән Водоканалтрест тарафынан соҡолған үтеп йөрөй алмаслыҡ ҙур соҡорҙар һаман тигеҙләтелмәй. Байкал урамы менән Революцион урамы мөйөшөндәге һыу менән тулған асыҡ соҡор һәр төрлө бала-ҡазалы ваҡиғаның сығанағы булып тора. Байкал урамынан Достоевский урамынан алып Революцион урамына тиклем булған өлөшөндә телеграф бағаналары ауышҡандар һәм ергә һелкенеп торалар, ә Достоевский урамынан алып Электрификация урамына тиклем өлөшә ямғырҙарҙан һуң үтеп йөрөй алмаҫлыҡ бысраҡ була. Беренсе класта уҡыусы кескәй балалар бында урынлашҡан 7-се номерлы урта мәктәпкә бына ошо бысраҡ урамды үтеп йөрөргә тейеш булалар. Хеҙмәтсәндәр бындағы Красноярский базарына барыу өсөн ҙур ыҙа сигәләр.

И. Шарламов,
ВЛКСМ-дың Молотов район комитетының ойоштороу бүлеге мөдире.

Газета витриналары тураһында

Газета витриналары хеҙмәтсәндәрҙе көндәлек яңылыҡтар менән таныштырып барыуҙа ҙур роль уйнай. Өфө ҡалаһының урамдарында «Правда», «Известия», «Комсомольская Правда», «Пионерская Правда», «Труд», «Ҡыҙыл Башҡортостан», «Красная Башкирия» һәм «Ҡыҙыл Таң» газеталарының витриналары бар.

Ләкин урамдарға ҡуйылған ҡайһы бер витриналарҙа тейешле тәртип һаҡланмай. Йыш ҡына, уларға йәбештерелгән ҡуйылған газеталар кеше уҡый алмаҫлыҡ бысранып бөткән булалар. Быға миҫал итеп Ленин урамындағы Пермск трамвай туҡталыу урыны яғына һәм Аксаков урамына ҡуйылған витриналарҙы күрһәтергә була. Быларҙа һәр ваҡыт бысранған һәм ямғырға һарғайып бөткән газеталарҙы күрергә мөмкин. Сөнки был урамдарҙағы витриналарға газеталар көн һайын ҡуйылып барылмай. Айырым газеталар 3 — 4 көн буйына алмаштырылмай. Был хәл, тәбиғи рәүештә, хеҙмәтсәндәр араһында риза һыҙлыҡ тыуҙыра. Сөнки совет кешеһе витриналарҙан яңы сыҡҡан газеталарҙы уҡыуы, яңылыҡтар менән үҙ ваҡытында танышып барыуы килә.

Унан һуң ВЛКСМ-дың Өлкә Комитеты органы «Ленинсе» газетаһының сыға башлауына хәҙер байтаҡ ваҡыт үтте. Шуға ҡарамаҫтан, Өфөлә әлегә тиклем был газетаның витринаһы юҡ.

И. Чанышев.

Силикат заводы тәрән өҙөклөктә

Өфө силикат заводы 1950 йылда производство программаһын ни бары 41,7 процентҡа ғына үтәп, государствоға 1.600 мең һум зыян килтергәйне.

Быйыл да унда беренсе квартал планы үтәлеше 60,4 процент кенә тәшкил итте. Шул уҡ осорҙа завод 366 мең һумлыҡ зыян күрҙе.

[illegible]

Завод булған оборудованиеһын дөрөҫ файҙаланһа, планды үтәү генә түгел, бәлки артығы менән үтәй алыр ине. [illegible] 1943 йылдан [illegible] 1950 йылдың июль айынан бирле [illegible]

[illegible]

Завод инженер-техник кадрҙар менән комплектланып етмәгән. [illegible]

[illegible] апрель айында элеватор ҡом менән күмелде. Ә бынан һуң күп тә үтмәй «СП-3» прессы ватылды. Шул уҡ көндә тағы ла бер нисә ватылыу һәм буш тороу ваҡиғалары булды. Тик 7 апрелдән 19 апрелгә тиклем генә буш тороу 52,5 сәғәткә етте.

Быларҙың бөтәһе лә техник етәкселектең [illegible]

1950 йылда завод төрлө сәбәптәр менән 3 мең сәғәттән артыҡ буш торған. Ә быйылғы беренсе кварталда буш тороу 561 сәғәт тәшкил итте.

[illegible]

Трест етәкселәре силикат заводына [illegible] ярҙам итерҙәр һәм заводтың эшенә ҡырҡа боролош яһарҙар, тип ышанабыҙ.

Р. Вәлиев,

ВКП(б)-ның Ленин райкомының промышленность һәм транспорт бүлеге мөдире.

Өфө ипподромында аттар сабышы

27 май. Сәғәт стрелкалары 12-гә яҡынлаша. Өфө ҡалаһының күп хеҙмәтсәндәре ипподромға йыйналғандар.

Сәғәт 12. Майҙанға дүрт юртаҡ сыҡты. Ярышта беренсе тапҡыр ғына ҡатнашҡан йәш аттар. Шуһлыҡтан уларҙы башта үҙ алдарына йөрөтөп алдылар. Старт бирелде. Ярһып торған аттар алға ынтылдылар. Финишка 1600 метр аралыҡты беренсе булып Боевая награда һәм икенсе булып Нарва ҡушаматлы аттар килделәр.

Икенсе заезда, 1200 метр дистанцияға сабышыуҙа 1949 йылда тыуған дүрт юртаҡ ҡатнашты. Старт биргәс тә юртаҡтар атҡан уҡ кеүек, алға атылдылар. Ә Парус ҡушаматлы ерән, тәүге кругты артылап үткәс тә нәмәнәлер өркөп, ситкә сыҡмаҡсы булды. Ләкин ат сабыштырыуҙа тәжрибәле Ғафарисламов уға ирек бирмәне, «Парус» уға буйһонорға мәжбүр булды. Был арала башҡалар байтаҡ алға киткәйнеләр. «Парус» бик рамлы елеп, уларҙы уҙып китте һәм ике минут 13 секундта финишта беренсе булып үтте.

Майҙанға тағы ла юртаҡтар сыҡты. Бында былтырғы сезонда бер нисә тапҡыр беренселекте алған «Верность» ҡатнашты. Күптәр был стаһлы ҡара бейәнең быйыл да уҙыуына ышаналар ине. Шул уҡ ваҡытта ярышта беренсе тапҡыр ғына ҡатнашҡан Георгин ҡушаматлы ерән дүнән үҙенең матурлығы һәм аяҡтарын етеҙ йөрөтөүе менән күптәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итте. Дүрт юртаҡ урынынан бер тигеҙ аҙымдар менән ҡуҙғалып киттеләр. Ярты круг та үтмәнеләр, икеһе байтаҡ артта ҡалды, ә «Верность» менән «Георгин» беренсе кругты йәнәшә генә үттеләр. Ә һуңғы хәл иткес кругта «Георгин» финишка «Верностән» бер секундҡа алда килде.

Түҙемһеҙлек менән көтөлгән алтынсы заезд башланды. Майҙанға былтырғы сезонда дан алған ике юртаҡ «Арсенал» һәм «Тень» сыҡты.

Судья сигнал бирҙе. Юртаҡтарҙың һаҡта аяҡтарҙы ла бер тигеҙ алып йәнәшә барыуҙары ҙур һоҡланыу тыуҙыра. Һуңғы круг. Бер генә аҙым булһа ла уҙҙырыу өмөтө менәнме, Геевский атына дилбегәһе менән ҡаҡты, былай ҙа ярһып килгән ҡыҙыу ҡанлы «Арсенал» ырғырға тотондо. Ул арала «Тень» үтеп тә китте. Ярыш шарты боҙолғанлыҡтан, был юртаҡтар бер аҙ ял иткәс тә, яңынан ярыштылар. Бында инде «Арсенал» 1600 метр араны 2 минут 32 секундта, «Тень» 2 минут 32,1 секундта үтте.

Юртаҡтар ярышында беренселекте алған «Арсеналды» йөрөтөүсе Геевскийгә беренсе, «Георгинде» йөрөтөүсе Московскийгә икенсе премия бирелде. Югерәктәр сабыштарыуҙа «Паруста» сапҡаны өсөн беренсе премияны Ғафарисламов алды. Уҙып килгән аттарҙы тәрбиәләүсе конюхтарға ла аҡсалата премиялар бирелде.

И. Ниғмәтуллин.

ФУТБОЛ

Футбол буйынса РСФСР беренселеге өсөн

27 майҙа «Динамо» стадионында Урал зонаһы буйынса РСФСР беренселеге өсөн нәүбәттәге футбол ярышы булды. Матчта Өфө ҡалаһының «Спартак» һәм Молотов ҡалаһының Сталин исемендәге завод командалары ҡатнаштылар.

Уйын бик ҡыҙыу темп менән башланып китте. Матчтың беренсе яртыһында Молотов командаһы «Спартак» ҡапҡаһына тәүге тупты индерҙе һәм ул уйындың һөҙөмтәһен хәл итте. Матч 1 : 0 иҫәбе менән Молотов командаһы файҙаһына тамамланды.

Кисә «Спартак» командаһы футболистәре Ижевск ҡалаһына киттеләр.

И. Гершов.

Башҡорт АССР-ы прокуратураһында

Дүртөйлө районы Байыш МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры Хәснетдинов, Микоян исемендәге колхоз баҫыуҙарында 25 гектар майҙанды ни бары 9 сантиметр тәрәнлектә һөргән. 66 гектар майҙанда (шул иҫәптән 50 гектар орлоҡ участкаһы) сәселгән бойҙай һәм 55 гектар майҙанға сәселгән һоло орлоғоноң 20 проценте күмдерелмәй ҡалған.

Тракторҙарҙы техник яҡтан тәрбиәләү эше ойошторолмаған, бик йыш ватылыу сәбәпле тракторҙар 1040 сәғәт тик торғандар. 1330 килограмм яғыулыҡ материалы артыҡ расходланған. Бригадир Хәснетдинов эшкә етәкселек итеү урынына, эскелек менән шөғөлләнгән.

Был енәйәттәре өсөн Хәснетдиновты арестҡа алыу һәм уголовный яуаплылыҡҡа тарттырыу тураһында Республика прокуроры бойороҡ бирҙе.

85 мең һумдан артыҡ отош түләнде

Күгәрсен районы һаҡлыҡ кассаһы ошо йылдың ғинуар айынан алып 20 майға тиклем заем облигациялары тотоусыларға 85 мең һумдан артыҡ отош аҡсаһы түләне. Шул иҫәптән, СССР халыҡ хужалығын тиҙҙән тергеҙеү һәм үҫтереүҙең дүртенсе государство заемы буйынса 37 мең һумдан артыҡ отош түләнде.

Шевченко исемендәге колхоз члены 83 йәшлек Мөхәмәт Абдулманов 1000 һум, «Красная заря» колхозы члендарынан Христофорова Елизавета 2 мең һум һәм Марков 1000 һум оттолар.

Х. Дәүләтшин.

Черниковск ҡалаһындағы А. С. Пушкин исемендәге баҡсала.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Киләһе йыл урожайы тураһында хәстәрлек

Дмитриевка МТС-ының механизаторҙары үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа сәсеү эштәрен иң яҡшы агротехник срокта тамамлау менән бергә, киләһе йыл урожайы тураһында ла хәстәрлек күрәләр.

Был эштә иптәш Николаев етәкселек иткән бригада алда бара. Бригада аҙ ғына ваҡыт эсендә 400 гектарға яҡын майҙанда пар һөрөү үткәрҙе.

Буравков, Ғәләүетдинов иптәштәрҙең бригадалары ла пар һөрөү планын үтәү алдында торалар.

МТС коллективы 4450 гектар майҙанда пар һөрөү планын май айы аҙағына тулыһынса үтәп сығыу өсөн көрәшә.

Х. Әбүзәров,

Дмитриевка МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары.

Картоф үҫтереүсе звеноның уңышы

Бәләбәй районы «Заветы Ильича» колхозы картоф орлоғо етештереүсе хужалыҡ булып тора. Колхозда был эштә иптәш Е. А. Кирьянова етәкселек иткән звено хеҙмәт өлгөләре күрһәтә.

1950 йылда иптәш Кирьянова звеноһы 8 гектар майҙанда лорх сортлы элита картофы үҫтерҙе һәм һәр гектарҙан уртаса, 125 центнер урынына, 233-әр центнер, ә бер гектарҙан 280 центнер урожай алды.

Иптәш Кирьянова звеноһында 8 кеше. Былтыр картоф ултыртылған ер көҙҙән тубға һөрәлеп, һәр гектарға 20 тонна серегән тирес, 3 центнер көл, 3 центнер суперфосфат индерелгәйне. Ултыртыу алдынан орлоҡ 25 көн буйына яровизациялаштырылды.

Тәрбиәләү түбәндәгеләрҙән торҙо: картоф шытҡанға тиклем һәм шытҡандан һуң сәсеүлектә тупраҡ рәттәргә ҡаршы тырматылды, бер тапҡыр йомшартылды, ике тапҡыр күмелде. Беренсе күмеү үҫемлектәр 18—20 сантиметрға күтәрелгәс, икенсе тапҡыр күмеү сәскә атыу алдынан үткәрелде. Тәрбиәләү ваҡытында ауырыу үҫемлектәр алып ташланды. Картоф көҙгә һалҡындарға тиклем йыйнап алынды.

Иптәш Кирьянова звеноһы быйыл да картофтан юғары урожай алыу өсөн көрәшә. Быйыл картоф ултыртыу юғары агротехник кимәлдә үткәрелде, квадрат-оялы ысулда ултыртылды.

М. Суслов.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 27 май. (ТАСС). Корея Халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһы 27 майҙа ошоларҙы хәбәр итте: һуңғы ваҡытта Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, Американың 11 полкына, Англия һәм Төркиә бригадаларына һәм 6 лисынмансы дивизияға байтаҡ юғалтыуҙар яһанылар.

Дошман частәренән: Америка армияһының — 12.926 кешеһе, Англия армияһының — 5.599 кешеһе, француз частәренең — 522, Төркиә частәренең — 900, Филиппины частәренең — 582, лисынмансы армияның — 26.349 кешеһе үлтерелде һәм яраланды. Бөтәһе 46.878 кеше үлтерелде һәм яраланды.

Американың 1.447 кешеһе, шул иҫәптән Американың икенсе дивизияһының 23-сө полкының командиры, Англияның — 1.286 кешеһе, шул иҫәптән пехота полкы командиры һәм айырым батальон командиры, 12.915 лисынмансы, француз, төрөк, филиппинсы һәм гоминдансы, шул иҫәптән лисынмансы армияның 8-се һәм 3-сө полктарының командирҙары пленға алынды. Бөтәһе 15.648 дошман һалдаты һәм офицеры пленға алынды.

Түбәндәге трофейҙар: төрлө калибрҙа 775 орудие, 30.089 винтовка, 106 зенит пулеметы, 347 ауыр пулемет, 692 еңел пулемет, 12.133 автомат, 1.236 автомашина, 29 броневик, 60 танк, 486 телефон аппараты ҡулға төшөрөлдө. Һуғыш припастары һәм башҡа трофейҙар иҫәпкә алыналар.

241 автомашина, 13 броневик, 134 танк юҡ ителде. 100-ҙән артығыраҡ дошман самолеты атып төшөрөлдө һәм 50-нән ашыуыраҡ самолеты зарарландырылды.

Корея Халыҡ армияһы воиндарының боевой подвигтәре

ПХЕНЬЯН, 26 май. (ТИММ). Фронттан алынған хәбәрҙәр Америка интервенттәренән һәм уларҙың лисынмансы эйәрсендәренән үҙ тыуған илдәренең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғон яҡлаусы Халыҡ армияһы воиндарының батырлығын күрһәтә. «Минчжу чосон» газетаһы Халыҡ армияһы частәренең береһенең миномётчиктәренең боевой эштәре тураһында һөйләй. Бер ваҡытты, тип яҙа газета, Англия-Америка интервенттәре артиллерия утынан һуң автомашиналарға бер батальон тиерлек һалдат тейәп, Халыҡ армияһы миномётчиктәренең ротаһы позицияларына һөжүм итә башланылар. Дошмандың йәнле көстә һәм техникала байтаҡ өҫтөн булыуына ҡарамаҫтан, миномёт ротаһының боецтары сигенмәнеләр. Улар дошман һалдаттарын үҙҙәренә яҡын ебәрҙеләр һәм һуңынан көслө ут астылар. Миномётчик Юн Док Сон беренсе атыуы менән уҡ дошмандың ике автомашинаһын зарарландырҙы, улар шунда уҡ яна башланылар. Дошман һалдаттары паникаға бирелеп сигенделәр. Был һуғышта 100 дошман һалдаты һәм офицеры үлтерелде һәм яраланды.

Н. ҡалаһы районында дошман Халыҡ армияһының Ли Сон Дик командовать иткән частенә ҡаршы атака яһау өсөн 3 батальон самаһы пехота туплаған. Батыр командир бер ротаға Англия-Америка ғәскәрҙәрен фронт яғынан атакаларға, ә икенсе ротаға — дошман ғәскәрҙәренең сигенеү юлын киҫергә бойороҡ биргән. Бер взвод дошман тылына сығырға һәм тылдан удар яһарға приказ алған. Ли Сон Дик командовать иткән часть ҡыйыу хәрәкәт итеп, һуғыш менән ҡалаға үтеп ингән, унда дошмандың 40-ҡа яҡын автомашинаһын алған. Урамдарҙа ҡаты һуғыш башланған. Дошманға ярҙамға тағы ла бер батальон килгән. Оҫта манёврҙар яһап Ли Сон Дик боецтары дошмандың бөтә атакаларын да кире ҡаҡҡандар, ҡаланы азат иткәндәр һәм уның өҫтөнә Корея Халыҡ-Демократик Республикаһының государство флагын элгәндәр. Был һуғышта Ли Сон Дик командовать иткән часть 660 дошман һалдатын һәм офицерын юҡ иткән һәм 57 автомашина, 34 еңел пулемёт, 8 эре калибрлы миномёт, 17 пушка, 180 винтовка, шулай уҡ күп кенә һуғыш припастары ҡулға төшөргән.

Халыҡ армияһының разведчиктәре ҡыйыу һәм тапҡыр хәрәкәт итәләр. Фронттың Н. участкаһында Халыҡ армияһы частәренең береһенең алдында дошманды бейеклектән алып ташлау бурысы тора ине. Бының өсөн дошман позицияларының нисек урынлашыуын белергә кәрәк ине. Часть командованиеһы Кин Чан Кер етәкселегендәге разведчиктар группаһына фронт линияһы артына үтеп инергә һәм «тел» алырға приказ биргән. Оҫта йәшеренеп, разведчиктар дошман оборонаһының алдынғы сигенә сыҡҡандар һәм бейек булмаған ҡалҡыулыҡта дошмандың пулемёт отделениеларын күргәндәр. Өс америкал һалдат йоҡлап ятҡан, ә ҡалғандары кәрт уйнап ултырғандар. Разведчиктар көтөлмәгәндә дошманға һөжүм иткәндәр. Америка һалдаттары ҡапыл булған был хәлдән аптырап ҡалғандар һәм ҡулдарын күтәргәндәр. Штабҡа килтерелгән америкал хәрби пленныйҙар ҡиммәтле мәғлүмәттәр биргәндәр. Был мәғлүмәттәр командованиеға эффектлы операция планын эшләргә мөмкинлек биргән. Операция дошманды тулыһынса тар-мар итеү менән тамамланған.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 25 май. (ТАСС). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының Франция вәкиле Пароди председателлегендә булып үткән 25 майҙағы ултырышында СССР вәкиле А. А. Громыко белдереү менән сыҡты. Громыко үҙенең белдереүендә Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһында совет тәҡдимен килешелмәгән пункт сифатында сит ил эштәре министрҙәре Советының көн тәртибенә индереүгә АҠШ, Англия һәм Франция вәкилдәренең ҡаршы килеүенең ышандырырлыҡ булмауын һәм нигеҙһеҙлеген тағы ла бер тапҡыр күрһәтте.

А. А. Громыко белдереүенән һуң үҙ позицияларын яҡлап Великобритания, АҠШ һәм Франция вәкилдәре сығыш яһанылар.

Көнбайыштағы өс держава вәкилдәренә яуап биреп, А. А. Громыко, совет делегацияһы, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә министрҙәр Советы тарафынан ҡаралырға тейеш, тип иҫәпләй, сөнки был пактты төҙөү һәм был базаларҙы ҡороу Европалағы халыҡ-ара киҫкенләшлектең төп сәбәбе булып тора һәм дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу тураһындағы мәсьәләгә уның турапан-тура мөнәсәбәте бар, тине.

Будапештта йәштәрҙ[ең] массовый митингы

БУДАПЕШТ, 27 май. (ТАСС). Де[мокра]тик йәштәрҙең Бөтә Донъя Федерац[ияһы] (ВФДМ) исполкомы сессияһының [асы]лаһыуы айҡанлы Будапештта 26 [май]ҙа йәштәрҙең массовый митингы [бул]ды. Митингыға йыйналған егеттәр, ҡыҙҙар ВФДМ исполкомы члендары президиумда күренеүен йылы [ҡаршы]ланылар. Залда «Йәшәһен ленинсе [комсо]мол! Йәшәһен ВФДМ!» тигән тауыштар күп тапҡырҙар яңғыраны.

ВФДМ председателе Э. Берлингуэр митингыла сығыш яһап, ҡунаҡсыллыҡ һәткән өсөн Венгрия хөкүмәтенә, Венгрия йәштәренә ҡайнар рәхмәт белдерҙе. Венгрия йәштәренең, тине [ул], иркле үҫеүе өсөн бөтә мөмкинлектәре бар. Уның алдында бөтә юлдар [асыҡ]. Шул уҡ ваҡытта капиталистик [ил]дәрҙә һәм бойондороҡло илдәр йәштәренең тормошо әлегә-әле насарлана [бара]. Империалистар йәштәрҙе милитаризацияларға, уны демократик илдәргә ҡаршы һуғыш ҡоралы итергә теләйҙәр. [Бөтә] йәштәр тыныслыҡ, иркле һәм бәхетле тормош теләйҙәр. Шуға күрә ул тыныслыҡ өсөн, биш бөйөк держава араһында Тыныслыҡ Пактын төҙөү өсөн актив көрәшә, йәштәрҙең һәм студенттарҙың өсөнсө Бөтә Донъя фестиваленә әҙерләнеүҙә актив ҡатнаша.

ВЛКСМ Үҙәк Комитетының секретары ВФДМ-ның вице-председателе Н. Михайлов социализм төҙөүсе һәм тыныслыҡ өсөн актив көрәшеүсе Венгрия йәштәренә совет йәштәре исеменән туғандарса сәләм тапшырҙы.

Михайловтың телмәре комсомол, Советтар Союзы хөрмәтенә, бөйөк Сталин хөрмәтенә овация менән бер нисә тапҡыр бүленде. Телмәр тамамланғанда [ла] овация бер нисә минут дауам итте. «Йәшәһен ленинсе-сталинсе комсомол!», «Тыныслыҡты яҡлайыҡ!», «Сталин и[сем]ле [бай]раҡ — тыныслыҡ өсөн!» тигән [ҙур] тауыштар яңғыраны.

Митингыла ҡатнашыусылар йәштәрҙең һәм студенттарҙың өсөнсө Бөтә Донъя фестивален Көнбайыш Германияла үткәреү буйынса әҙерлек комитетының эшен тыйыуға ҡаршы Бонн хөкүмәтенә протест телеграммаһының текстын бер тауыштан ҡабул иттеләр.

Американың һауа пираттары Пхеньянды варварҙарса бомбаға тоталар

ПХЕНЬЯН, 27 май. (ТАСС). 24 майҙа көндөҙ Американың 6 бомбардировщигы Пхеньян районына варварҙарса һөжүм яһаған. 190-дан артығыраҡ бомба ташланған, уларҙың күбеһе аҡрын шартлаусы бомба булған. Бөтә көн буйына ҡаланың төрлө райондарында был бомбаларҙың шартлауы ишетелгән. Тыныс халыҡ араһында үлеүселәр һәм яраланыусылар бар.

Төндә яңы һөжүм яһалған. Болотлар йәшеренеп, Американың һауа пираттары тәртипһеҙ рәүештә бомбалар ташлай башлағандар, ул бомбалар төн буйы шартлағандар.

Японияла кәләш менән сауҙа итеү

ШАНХАЙ, 27 май. (ТАСС). Токионан хәбәр итеүҙәренсә, ошо көндәрҙә Япония полицияһы Ямагата префектураһында ҡолдарҙы һатыу менән шөғөлләнгән баҙаһ дайҙер Иосидзиро Таҡаданы һәм уның ярҙамсыһын арестҡа алған. Тәүге тикшереү менән ошолар билдәләнелгән, Таҡада үткән йыл башынан алып быйылғы йылдың апреленә тиклем Сидзоуҡа префектураһындағы бер туҡыу фабрикаһына 15 йәштән алып һәм унан да юғарыраҡ йәштәге 19 крәҫтиән ҡыҙын һатҡан, һәр бер ҡыҙ өсөн уртаса 3.500 иен аҡса алған.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАРОВ.

„ГЛАВКИНОПРОКАТ"ТЫҢ БАШҠОРТОСТАН КОНТОРАҺЫ

республика экрандарына Польшаның

„БУЙҺОНМАҒАН ҠАЛА"

тигән художестволы яңы фильмен сығара.

Сценаристәре: Е. Анджевский, Е. Зажицкий.
Постановщик—композитор Палестер.
Режиссер—Ежи Зажицкий

„ФИЛЬМ ПОЛЬСКИЙ" художестволы фильмдәр студияһы тарафынан 1950 йылда эшләнгән.

„ГЛАВКИНОПРОКАТ" тарафынан 1951 йылда сығарылған.

„Буйһонмаған ҡала" фильме тыныслыҡ һәм прогресс эшенә хеҙмәт итә, ер шарының бөтә мөйөшөндә фашизмға ҡаршы көрәшкә мобилизовать итеүсе документ ул.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА:

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — «ПАЯЦЫ» һәм КОНЦЕРТ.

«Октябрҙә»—«БУЙҺОНМАҒАН ҠАЛА».

«Салауатта» — «ДОНЕЦ ШАХТЕРҘАРЫ» тигән төҫлө фильм.

«Уралда» — «ЯҢЫ БОЕЦТАР САФҠА БАҪЫРҘАР».

Өфө һәм Черниковск ҡалаларындағы эштәр начальнигы управлениеһына балта оҫталары, ташсылар, штукатурщиктар, малярҙар, 1, 2 һәм 3-сө класлы шоферҙар, йөк ташыусылар, грузчиктар, төрлө эшселәр, десятник-мастерҙар, эш баштарыусылар талап ителә.

Эш хаҡы государство расценкалары буйынса сдельный тәртиптә түләнә. Яңғыҙаҡтарға дөйөм торлаҡ, семьялыларға — бүлмәләр бирелә.

Эшкә инеү тураһында булған бөтә һорауҙар буйынса эштәр начальнигы управлениеһының кадрҙар бүлегенә түбәндәге адрес менән мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Революционная урамы, 37, кадрҙар бүлеге, телефон 2-90-63.

Өфө ҡалаһының малярияға ҡаршы станцияһы

1951 йылғы сезонда июнь айынан алып сентябрь айына тиклем республиканың малярияға ҡаршы станцияһы малярия серәкәйҙәренең ҡаршылауыҡтарын бөтөрөү маҡсатында һыу ятҡылыҡтарына самолеттан ағыу һибәсәк, тип белдерә. Ағыулау эштәре тиодифениламин һәм Париж йәшеле ҡулланыу юлы менән Өфөнән Черниковск ҡалаһына тиклем 5 километрлыҡ зонала һәм халыҡ йәшәгән пункттар: Октябрьская революция исемендәге затон, Михайловка, Суровка, Черниковск химия заводының ҡала яны хужалығы, Алексеевка, Сосновка, Тарбеевка, Лавочное, ст. Александровка, Максимовка, Шакша, Базиловка, Йылҡыбай, Дуднан переправаһы, Өфө ял йорто, Барповка, Чесноковка, биофабриканың ярҙамсы хужалығы, Өфө ҡалаһының Дим районы, Кустарево, Романовка, Миловканан алыҫ түгел урындарҙа үткәреләсәк.

Умарта аҫраған бөтә кешеләр умарталарын ағыулана торған һыу ятҡылыҡтарынан 7—10 километрға ситкә сығарырға тейештәр.

Мал аҫраусылар ағыулау үткәргәндән һуң 3 тәүлек буйына малдарын ағыуланған һыу ятҡылыҡтарына ебәрмәҫкә тейештәр.

Белешмәләр алыу өсөн түбәндәге адресҡа мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 74-се номерлы йорт. Телефон номеры — 2—92—91.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П02499 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

32-се ЙЫЛ СЫҒА.

№ 105 (8822)
1951 йыл
30 МАЙ
шаршамбы

хаҡы 20 тин.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА (1-се бит).
БАШҠОРТ АССР-Ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЕНДӘ. 1951 йылда колхоздарҙа һәм совхоздарҙа ауыл хужалығы сәсеүлектәрен тәрбиәләү буйынса саралар тураһында (1-се бит).
Н. Өхмәр.—Телдең грамматик төҙөлөше тураһында И. В. Сталин тәғлимәте (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. С. Нухаренко. — Етешһеҙлектәр бөтерелә (2-се бит).
Н. Падуков.— Партия ойошмаһы колхоз производствоһының күтәрелеүе өсөн (2-се бит).
Р. Алгушев.— Мәскәү (2-се бит).
МТС-тарҙа техниканы тулы файҙаланыуға. А. Норинов. — Резервтарҙы файҙаланыу [illegible] (3-се бит).
М. Хөббулин.— Алдынғыларҙың [illegible] (3-се бит).
ЭЛЕКТРИФИКАЦИЯ — КОММУНИЗМГА ТУРА ЮЛ. З. Ирмешев.— Коммунистар ГЭС-ы (3-се бит).
Н. Иванов.— Бөтә халыҡ [illegible] (3-се бит).
Х. Сафин.— [illegible] коммунизм утары (3-се бит).
СПЕЦИАЛИСТ КОНФЕРЕНЦИЯҺЫ. Х. Фатхуллин.— Күп йыллыҡ үлән орлоҡсолоғо участкалары (4-се бит).
ҺЫТАЙ ХАЛЫҠ ХӨКҮМӘТЕ МЕНӘН ТИБЕТ ЖЕРЛЕ ХӨКҮМӘТЕ АРАҺЫНДА КИЛЕШЕҮ (4-се бит).
КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР (4-се бит).

Колхоздарҙы электрлаштереү—бөтә общественностең мөһим эше

Коммунистар партияһының, Совет власының бөйөк ойоштороусылары Ленин һәм Сталин илде тулы электрлаштереү эшенә ҙур әһәмиәт бирҙеләр. Ленин: «Коммунизм — ул Совет власы плюс бөтә илде электрлаштереү», — тип билдәләне.

Бөйөк Ленин Г. М. Кржижановскийға [illegible] «...10—20 йылдан бөтә Россияны, һәм промышленность һәм игенселек Россияһын [illegible]» [illegible]

[illegible] ГОЭЛРО [illegible] 1935 йылда [illegible]

[illegible] Иптәш Сталин 1946 йылдың 9 февралендә [illegible]

[illegible] социалистик революцияға тиклем артта ҡалған Башҡортостан [illegible]

[illegible] Колхоздарҙы электрлаштереү [illegible] бөтә общественностең мөһим эше ул.

СССР-ҙың Ленин орденле Государство Академия
Ҙур театрының 175 йыллығы

Ҙур театрҙа тантаналы ултырыш

Совет халҡы 28 майҙа ССР Союзының Государство Академия Ҙур театрының 175 йыллығын билдәләне.

28 майҙа Мәскәүҙәге Ҙур театр залына театрҙың 175 йыллығы көнөндә юбилярҙарҙы хөрмәтләү өсөн, партия, общественный ойошмаларҙың вәкилдәре, искусство работниктәре, яҙыусылар, туғандаш республикаларҙың вәкилдәре йыйналды.

Сәхнә түрендә бөйөк юлбашсылар В. И. Ленин менән И. В. Сталин портреттәре ҡуйылған.

Сәхнәнең ике яғында: 1776—1951 тигән ике дата ут булып яна.

Бөтә Союз юбилей комитетының председателе РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле иптәш А. П. Анисимов тантаналы ултырышты инеш һүҙе менән асты.

Уңан һуң һүҙ СССР Министрҙар Советы ҡарамағындағы искусство эштәре Комитетының председателе П. П. Беспаловҡа бирелде.

Йыйылыусылар совет ғалимдарынан юбилярҙарға сәләм тапшырған СССР фәндәр Академияһының вице-президенты академик В. П. Волгинды йылы ҡаршылайҙар.

Ленин ҡалаһы хеҙмәтсәндәренән юбилярҙы СССР халыҡ артисы Н. К. Черкасов, Совет Армияһынан һәм Хәрби-Диңгеҙ флотынан — Советтар Союзы Маршалы Л. А. Говоров ҡотлай.

Яуап һүҙе СССР халыҡ артисы М. Д. Михайловҡа бирелә. СССР-ҙың Государство Академия Ҙур театры коллективы исеменән ул йылы һәм дуҫтарса ҡотлауҙар һәм теләктәр өсөн ысын* йөрәктән сыҡҡан рәхмәт тапшыра.

Йыйылышта ҡатнашыусылар ғәйәт ҙур күтәренкелек менән совет халҡының бөйөк юлбашсыһы, уның бөтә еңеүҙәрен ойоштороусы һәм рухландырыусы иптәш И. В. Сталинға ҡотлау ҡабул итәләр.

Тантаналы өлөш Ҙур театр хоры һәм оркестры башҡарыуында Сталин тураһында кантата менән тамамлана.

Һуңынан илебеҙҙең иң яҡшы артистары ҡатнашлығында ҙур концерт булды.

(ТАСС).

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА

Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәрен тиҙләтеүгә беҙҙең вклад

Волгала һәм Днепрҙа, Донда һәм Аму-Дарьяла коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре бөтә совет халҡының ҡатнашлығында төҙөлөүен беҙ бик яҡшы аңлайбыҙ. Был бөйөк төҙөлөштәрҙә беҙҙең Башҡортостан республикаһы ҡыҙҙары һәм егеттәре лә ҡатнаша. Улар производствола алдынғы эш күрһәткестәре менән төҙөлөшкә үҙ вкладтарын индерәләр.

Беҙ ҙә, Иманлекүл МТС-ында эшләүсе ҡыҙҙар, бөйөк төҙөлөштәргә производствоның юғары күрһәткестәрен биреп эш процесында экономияланған аҡса средстволарыбыҙ менән төҙөлөштө тиҙләтергә ярҙам итәбеҙ.

Беҙ, үҙебеҙ эшләйәсәк комбайндарҙы срогынан алда яҡшы сифатлы итеп ремонтланыҡ. 3 «Коммунар» комбайнын ремонтлау өсөн государство тарафынан билдәләнгән аҡса средстволарының 2596 һумына экономия яһаныҡ. Беҙ яңы урожай йыйыу кампанияһын өлгөлө үткәреүҙе үҙебеҙҙең төп бурысыбыҙ итеп ҡуйҙыҡ.

Иманлекүл МТС-ының комбайнеркалары: **М. Техфәтуллина, Ш. Әхмәтьянова, М. Сеитова.**

Төҙөлөш эштәре киң йәйелдерелә

Стәрлетамаҡ районы колхоздарында малсылыҡ торлаҡтары төҙөү эшенә серьез иғтибар бирелә. Был эште колхоздарҙағы төҙөлөш бригадалары алып баралар. Бригадирҙар итеп тәжрибәле колхозсылар беркетелгән. Улар өсөн район Советы эргәһендә бер айлыҡ курс үткәрелде.

Колхоздар бөтәһе 8400 кубометр ағас, 3000 кубометр таш һәм бик күп кирбес әҙерләнеләр. Әрлетелгән «Красное знамя» колхозы 1750 ҡош өсөн стандарт торлаҡ, аттар өсөн конюшня эшләне. Быуан тыш колхоздың төҙөлөш бригадаһы сусҡа торлаҡтарына капиталь ремонт үткәрҙе. Быйыл бригада 20 мең кирбес, 240 кубометр ағас һәм 240 кубометр шлак блоктары әҙерләне.

1951 йылдың производство планында колхоз малсылыҡ фермаларын механизациялаштырыу эшен планлаштырҙы. Быйыл өсөн һалам ҡырҡҡыс, силос турағыстар, электр көсө менән һөт һауыу аппараттары һатып алынды.

Районның Маленков, Киров исемендәге һәм башҡа колхоздарында ла мал торлаҡтары төҙөү эше яҡшы ойошторолған. Күптән түгел генә Киров исемендәге колхозда ҡошсолоҡ фермаһы өсөн яңы торлаҡтар һалынды. Быйыл район колхоздары 1600 баш һыйыр, 5 мең баш һарыҡ, 540 баш ат һыйҙырышлы мал торлаҡтары төҙөйәсәктәр.

А. Клементьев.

Өфө сәй үлсәү фабрикаһы коллективы үҙенең производство программаһын срогынан алда үтәү өсөн көрәшә. А. Ғилуанова һәм Р. Хәмитова иптәштәрҙең бригадалары смена нормаларын 130—135 процентҡа үтәйҙәр һәм отличнно сифатлы продукция бирәләр.

Һүрәттә: (һулдан уңға) А. Ғилуанова һәм Р. Хәмитова иптәштәр үҙ бригадалары етештергән продукцияның сифатын тикшерәләр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Башҡортостан һәм Азербайжан нефтселәренең ярышы

Бригада алдынғылар сафына сыҡты

«Туймазынефть» тресының 1-се бораулау конторағына эшкә инеү менән партия ойошмаһы мине мастер иптәш Ғәлиевтең бригадаһына ебәрҙе һәм производствола эшләү менән бергә бригадала агитаторлыҡ эшен алып барыуҙы йөкмәтте, производство яғынан артта ҡалған был бригаданы алдынғылар сафына алып сығыу бурысын ҡуйҙы.

Мин эште бригадағы эшселәр араһында социалистик ярыш ойоштороуҙан башланым. Сөнки планды тултыра алмауҙың бөтә сәбәбе шунда булып сыҡты.

Бораулау мастеры иптәш Ғәлиев менән беҙ бригаданың йыйылышында йыйылыш һәм унда социалистик ярыш тураһындағы мәсьәләне ҡуйҙыҡ. Был йыйылышта вахталар араһында социалистик ярыш төҙөлдө. Бораулаусылар үҙҙәренең пландарын 130—150 процентҡа үтәргә йөкләмә алдылар.

Йыйылыштан һуң мин күргәҙмә агитация ойоштороу өҫтөндә эшләй башланым. Иң элек кәндә культура будкаһында һәр бер вахтаның алған йөкләмәһен, көндәлек эшен күрһәткән графиктәр эленде ҡуйҙым. Бынан башҡа мин төрлө темаларға регуляр беседалар үткәреп торҙом. Һөҙөмтәлә бригада алған йөкләмәләрен арттырып үтәүгә өлгәште. Был эштә партия бюроһы, айырыуса ВКП(б) Үҙәк Комитеты парторгы Идрисов, парткабинет мөдире Туҡаева иптәштәр миңә ҙур булышлыҡ иттеләр. Улар беседалар үткәреү өсөн айлыҡ план төҙөүҙә һәм кәрәкле китаптар һайлап алыуҙа ярҙам күрһәтә. Бригадала беҙ бөтә коллектив менән берлектә эштән буш сәғәттәрҙә радио тыңлайбыҙ, китаптар уҡыйбыҙ.

Бөтә был эштәр 23-сө бораулау скважинаһын срогынан элек эксплуатацияға тапшырыуға өлгәшеүҙе тәьмин итте.

Хәҙер мастер иптәш Ғәлиевтең бригадаһы хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү, производство планын тағы ла ҡыҫҡараҡ ваҡыт эсендә үтәү өсөн көрәшә.

Л. Кондратенко,
«Туймазынефть» тресының 1-се бораулау конторағы агитаторы.

Заданиеләр арттырып үтәлә

Белорет. Металлургия заводының домна цехы коллективы май айында ҙур уңыштарға өлгәште. Домнасылар беренсе кварталдағы бурыстарын ҡаплап, биш айлыҡ планды срогынан алда үтәнеләр. Социалистик ярышта иптәш Фролов сменаһы алда бара. Йәш горновой Виталий Мухин май айы заданиеһен срогынан биш көнгә алда үтәне.

Мартенселәр шулай уҡ графиктан алда баралар. Бында көндәлек заданиеләрҙең үтәлеше 102—103 процент тәшкил итә.

Ойошҡанлыҡ уңышты хәл итә

Колхоз правлениеһы, 20 колхозсы һәм 6 ат беркетеп, мине юл төҙөү бригадаһы бригадиры итеп билдәләне. Задание ҙур: 300 кубометр ер һәм 10 кубометр ағас сығарырға кәрәк. Йәнле тартыу көстәре аҙыраҡ. Шуға күрә, мин заданиене ваҡытында үтәү өсөн эште тәүге көндәрҙә үк сдельщина нигеҙендә ойошторҙом. Юл эшендә тәүге йыл эшләүселәргә ҡоралдар менән файҙаланыу тәртибен күрһәттем. Алған социалистик йөкләмәне срогынан алда үтәү өсөн ярыш йәйелдерелде.

Бындай эш практикаһы беҙгә ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Эшкә һуңлап сығыусылар, смена заданиеләрен үтәмәүселәр хәҙер юҡ инде. Николкина, Халитушева иптәштәр 2 кубометр урынына 4-әр кубометр ер ҡаҙыйҙар. Ат менән эшләүселәрҙән иптәш Абаканнев көндәлек заданиеһын 200 — 250 процентҡа үтәй. Хәҙер бригадаға бирелгән эш планының 60 процентын үтәнек тә инде.

Андрей Апаев,
Мишкә районы Ленин исемендәге колхоздың юл ремонтлау бригадаһы бригадиры.

Взностар срогынан алда индерелә

Шишмә районының хеҙмәтсәндәре яңы заем взностарын срогынан алда индерәләр. Маленков исемендәге колхоздың (Шишмә ауыл Советы) колхозсылары был тәңгәлдә айырыуса ҙур ойошҡанлыҡ өлгөһө күрһәттеләр. Улар бөтә подписка суммаһын заемға яҙылыуҙың тәүге көнөндә үк тулыһынса индереп бөттеләр. Заем уполномоченныйы иптәш Мөҙәрис Әсәдуллин үҙенә беркетелгән участкала ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 6675 һумлыҡ подписка үткәреп, аҡсаһын шунда уҡ йыйып алды һәм колхозсыларға яңы заем облигацияларын тапшырҙы.

Ҡалмаш, Сайран, Арслан, Балағош, Үргә Тирмә, Екатеринославский, Чуалкин ауыл Советтарында ла колхозсылар заем взностарын срогынан алда индереүҙә киң йәйелдерҙеләр. Бында подписка суммаһының 50 процентынан артығырағы индерелде.

Тотош район буйынса заем взностары, үҙған йылғы шул уҡ ваҡытҡа ҡарағанда, байтаҡ артыҡ тәшкил итә.

Заем взностарын срогынан алда индереү темпы көндән-көн арта бара.

Я. Бәҙретдинов,
Башҡорт АССР-ы Хеҙмәт һаҡлыҡ кассалары Управлениеһы начальнигының урынбаҫары.

БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЕНДӘ

1951 йылда колхоздарҙа һәм совхоздарҙа ауыл хужалығы сәсеүлектәрен тәрбиәләү буйынса саралар тураһында

Ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен тәрбиәләүҙең торошон ҡарап, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы, республиканың күп кенә район Советтарының исполкомдары һәм район ауыл хужалығы бүлектәре ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен тәрбиәләүҙе ойоштороу эше менән ҡәнәғәтләнмәҫлек шөғөлләнәләр, тип билдәләне. Күп кенә колхоздарҙа һәм совхоздарҙа сәсеүлектәрҙе утау, пропаш культураларҙың рәт араларын эшкәртеү, ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыу пландары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү буйынса башҡа саралар йылдан-йылға үтәлмәй килә.

Пропаш культураларҙы (шәкәр сөгөлдөрө, күк һағыҙ, көнбағыш, картоф һәм башҡалар) эшкәртеүҙе механизациялау сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәҫлек үткәрелде.

Республиканың машина-трактор станциялары 1950 йылда пропаш культураларҙың рәт араларын эшкәртеү буйынса трактор эштәре планын үтәмәнеләр.

Ауыл хужалығы хәҙерге заман техникаһы менән байыҡтырылған һәм, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойошторған ваҡытта, ауыл хужалығы культураларының сәсеүлектәрен тәрбиәләү буйынса эштәрҙе үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Ләкин, быйыл ҡайһы бер район Советтары исполкомдарының, район ауыл хужалығы бүлектәренең, МТС-тарҙың һәм совхоздарҙың етәкселәре пропаш культуралары сәсеүлектәрен утауҙы һәм механизация юлы менән эшкәртеүҙе үҙ ваҡытында үткәреүҙең әһәмиәтен әле булһа баһалап еткермәйҙәр, ә күп кенә МТС-тарҙың һәм совхоздарҙың директорҙары сәсеүлектәрҙең рәт араларын культивациялау һәм өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы ойоштороу планын үтәүгә яуапһыҙ ҡарайҙар. Күп кенә райондарҙа (Ҡырмыҫҡалы, Шишмә, Бөләү, Благовар, Күгәрсен) машина-трактор станциялары тракторҙарҙы һәм культиваторҙарҙы пропаш культураларҙың рәт араларын эшкәртеүгә әҙерләмәгәндәр.

Ауыл хужалығы министерствоһы (иптәш Нәбиуллин), бөртөклө ашлыҡ совхоздары тресы (директоры иптәш Ғилуанов), һөтсөлөк-сусҡасылыҡ совхоздары тресы (директоры иптәш Фоломеев) һәм район Советтары исполкомдарының председателдәре был етешһеҙлектәр менән килешеп йәшәйҙәр һәм ауыл хужалығы культураларының сәсеүлектәрен тәрбиәләү буйынса бөтә эштәрҙе үҙ ваҡытында үтәү өсөн кәрәкле саралар күрмәйҙәр.

Күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү маҡсаттарында һәм ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен тәрбиәләүҙе үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үткәреү эшенә айырыуса мөһим әһәмиәт биреп, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Ауыл хужалығы министерствоһын (иптәш Нәбиуллинде), бөртөклө ашлыҡ совхоздары тресының директоры иптәш Ғилуановты, һөтсөлөк-сусҡасылыҡ совхоздары тресы директоры иптәш Фоломеевты һәм район Советтары исполкомдарын түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итте:

Ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен тәрбиәләүгә әҙерлектәге һәм үткәреүҙәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн ашығыс саралар күрергә һәм һәр бер колхозда һәм совхозда сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән утауҙы, пропаш культураларҙы һирәкләтеүҙе һәм уларҙың рәт араларын эшкәртеүҙе һәм бөтә ауыл хужалығы культураларынан 1951 йылда юғары урожай алыуҙы тәьмин итеү өсөн уларҙы ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы үҙ ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үткәреүҙе ойоштороорға;

бер үк ваҡытта Министрҙар Советы ауыл хужалығы культураларының сәсеүлектәрен тәрбиәләү буйынса райондарға биш көнлөк график билдәләне һәм район Советтары исполкомдарына биш көнлөк заданиене һәр бер колхозға, МТС-ҡа һәм совхозға еткерергә тәҡдим итте.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы район Советтары исполкомдарынан һәм район ауыл хужалығы бүлектәренән, колхоз председателдәренән, совхоз һәм МТС директорҙарынан бөтә колхоздарҙа һәм совхоздарҙа ужымдарҙы утауҙы 1 июндән дә һуңламайынса тамамлауҙы, иртә яҙғы бөртөклө ашлыҡ, ҡуҙаҡлы һәм майлы культураларҙы (көнбағыштан башҡа), күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡ үләндәрҙең орлоҡ сәсеүлектәрен утауҙы 10 июндән дә һуңламайынса тамамлауҙы һәм был культуралар сәсеүлектәрен артабан утауҙы ҡый үләндәренең барлыҡҡа килеүе ваҡытында үткәреүҙе талап итте.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы район Советы исполкомдары председателдәрен, район ауыл хужалығы бүлеге мөдирҙәрен һәм МТС, совхоздар директорҙарын, түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итте:

һәр бер колхоз һәм совхоз тулыһынса талап ителгән күләмдәрҙә үҙен орлоҡ участкалары урожайынан юғары сифатлы орлоҡтар менән тәьмин итһен өсөн орлоҡ участкаларында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү буйынса эштәрҙең бөтә комплексын үткәреүҙе ойоштороорға;

орлоҡ участкаларында бөтә ауыл хужалығы культураларының сәсеүлектәрен өлгөлө тәрбиәләүҙе тәьмин итергә, шул уҡ ваҡытта сәсеүлектәрҙе бөтә төр ҡый үләндәренән, бигерәк тә айырып алыуы ҡыйын булған культураларҙан (арыштағы бойҙайҙан һәм башҡалар) һәм ҡый үләндәренән (ҡара һолоно һолонан һәм башҡалар) ентекле итеп таҙартырға;

сортлы сәсеүлектәрҙә һәм орлоҡ участкаларында апробацияның үҙ ваҡытында үткәрелеүен, шулай уҡ апробацияланған сәсеүлектәргә сорт документтарының оформить ителеүен ныҡлы күҙәтергә;

сәсеүлектәрҙе урындағы һәм минераль ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы, шулай уҡ арышты, ҡара бойҙайҙы, көнбағышты, горчицаны, кукурузаны, клеверҙы, люцернаны өҫтәмә яһалма һеркәләндереүҙе үткәреүҙе һәм ауыл хужалығы культураларын тәрбиәләүҙең башҡа агротехник алымдарын киң күләмдәрҙә ҡулланыуҙы тәьмин итергә;

ауыл хужалығы үҫемлектәре ҡортҡостарының һәм ауырыуҙарының барлыҡҡа килеүенә даими күҙәтеү урынлаштырырға һәм уларға ҡаршы үҙ ваҡытында көрәш ойоштороорға;

ауыл хужалығы культураларының сәсеүлектәрен тәрбиәләү сифатына системалы контроль ойоштороорға, насар эшләү ваҡиғаларына юл ҡуймаҫҡа.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы республиканың күп кенә райондарында, шул иҫәптән Әлшәй, Дәүләкән, Бишбүләк, Өбйәлил райондарында һуғарылып торған участкаларҙы үҙ ваҡытында һуғарыуҙы һәм тәрбиәләүҙе тәьмин итмәүҙә юл ҡуйылмаҫлыҡ булып тороуын айырыуса билдәләне һәм Ауыл хужалығы министерствоһына, бөртөклө ашлыҡ совхоздары тресы директоры иптәш Ғилуановҡа, һөтсөлөк-сусҡасылыҡ совхоздары тресы директоры иптәш Фоломеевҡа, район Советтары исполкомдарына һәм район ауыл хужалығы бүлектәренә был серьез етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн кисектергеһеҙ саралар күрергә һәм һуғарылған ерҙәрҙә юғары урожай алыуҙы тәьмин итергә ҡушты.

ТЕЛДЕҢ ГРАММАТИКА ТӨҘӨЛӨШӨ ТУРАҺЫНДА И. В. СТАЛИН УЧЕНИЕҺЫ

К. ӘХМӘР
филология фәндәре кандидаты

Иптәш Сталиндең тел ғилеме тураһындағы яңы хеҙмәттәре марксистик тел ғилеменең төп мәсьәләләрен ижади эшләүҙең ғүзәл өлгөһө булып тора.

Иптәш Сталиндең беҙҙең фән тарихындағы бөйөк хеҙмәте, бөтәһенән элек, шунан тора, ул, марксистик әҙәбиәттә беренсе булып, общественный күренеш булыу яғынан телдең асыл тәбиғәтен, кешеләрҙең аралашыу ҡоралы, обществолағы фекер алышыу ҡоралы, көрәш һәм үҫеш ҡоралы булыу яғынан характерлы черталарын асыҡ бирҙе. Грамматика, лексикология, семантика, диалектология һәм тел тарихы тураһында иптәш Сталин тарафынан гениаль эшләнгән положениеләр марксистик тел ғилеменең үҫеш юлдарын асыҡ билдәләйҙәр.

Билдәле булыуынса, академик Марр һәм уның «шәкерттәре», иптәш Сталин әйткәнсә, «грамматиканы — буш «формальность» тип, ә грамматика төҙөлөшөн телдең нигеҙе итеп иҫәпләүсе кешеләрҙе «формалистар» тип иҫәпләнеләр.

Академик Марр үҙенең 1930 йылда яҙған бер мәҡәләһендә хатта, грамматиканың айырым фән булып йәшәргә тейешлеген шик аҫтына алып, «грамматиканың ғөмүмән, кәрәге бармы һуң?» тигән һорауҙы ҡуя. (Н. Я. Марр, һайланма әҫәрҙәр, II том, 377-се бит). Шулай итеп «тел тураһында яңы учение» яҡлылар тел ғилеменең иң мөһим бүлеге булған грамматиканы айырым фән булыу яғынан бөтөрөргә тырыштылар.

Шуның өсөн иптәш Сталиндең тел ғилеме тураһындағы үҙенең яңы гениаль хеҙмәттәрендә грамматикаға, телдең грамматика төҙөлөшөнә айырым туҡталыуы осраҡлы бер хәл түгел.

И. В. Сталиндең учениеһы буйынса «телдең грамматика төҙөлөшө менән уның төп һүҙлек фонды телдең нигеҙен, уның спецификаһының асылын тәшкил итәләр». (24-се бит).

Ни өсөн телдең нигеҙе булып өн системаһы, хатта телдең һүҙлек составы ла иҫәпләнмәйенсә, грамматика төҙөлөшө менән төп һүҙлек фонды иҫәпләнә?

Өндәр айырым торған хәлдә бер төрлө лә мәғәнә бирмәйҙәр, улар һүҙ составында ғына һүҙҙәрҙе мәғәнә яғынан бер-береһенән айырыу функцияһын үтәйҙәр. Шуның өсөн өндәр, әлбиттә, тел була алмайҙар.

Өҙлекһеҙ тиҙләп үҙгәреп торған һүҙлек составы ла шулай уҡ телдең нигеҙе була алмай. Һүҙлек составынан башҡа бер тел дә булыуы мөмкин булмаһа ла, һүҙлек составы үҙенән-үҙе генә тел була алмай.

Бер телдең һүҙлек составынан: һыу, ағас, бүләк, ҡыҙыл, аҡ, ҡара һәм башҡа шундай һымаҡ грамматик яҡтан үҙ-ара бәйләнмәгән һүҙҙәрҙе теләһә ҡуйыр алып, теҙеп әйтеп сығайыҡ, бер-береһенә бәйләнмәгән айырым һүҙҙәрҙән торғанлыҡтан, улар әле кешеләрҙең бер-береһе менән аралашыуына, фекер алышыуға һәм үҙ-ара аңлашыуға ирешеүгә ярҙам итә торған ҡоралды — телде тәшкил итә алмайҙар. Иптәш Сталин әйткәнсә, былар әле тел өсөн төҙәү материалы ғына, улар грамматика ҡарамағына ингәс кенә ҙур әһәмиәткә эйә булып китәләр. Иптәш Сталин: «Хәҙерге телдең элементтарының бик борондоғо замандарҙа, коллок эпохаһында тыйлем уҡ нигеҙ һалынған, тип уйларға кәрәк. Ул ҡатмарлы тел булмаған, уның һүҙлек фонды ярлы булған, ләкин уның үҙенең грамматика төҙөлөшө булған, дөрөҫ, примитив, ләкин шулай ҙа, грамматика төҙөлөшө булған», — ти (24-се бит). Тимәк, был тел ни тиклем генә примитив булмаһын, барлыҡҡа килеүенең тәү осоронда уҡ бер-береһенә бәйләнмәгән айырым һүҙҙәрҙән торған тел булмаған, ә төҙәү материалынан — бер-береһенә бәйләнгән һүҙҙәрҙән ойошҡан, үҙенең грамматика төҙөлөшө булған тел булып торған.

«Тел, — ти иптәш Сталин, — күп эпохаларҙың продукты, ул шул эпохалар буйынса формалаша, байый, үҫә, шымара бара». (7-се бит). Тимәк, телдең структураһын тәшкил иткән грамматика төҙөлөшө менән төп һүҙлек фонды ла күп эпохаларҙың продукты булып тора.

Телдең грамматика төҙөлөшө, иптәш Сталин учениеһы буйынса, тотороҡло һәм быуаттар буйына йәшәй. Ваҡыттар үтеү менән, әлбиттә, ул үҙгәрештәр кисерә, «ул камиллаша, үҙ ҡағиҙәләрен яҡшырта һәм асыҡлай бара, яңы ҡағиҙәләр менән байыҡтырыла, ләкин грамматика төҙөлөшөнөң нигеҙҙәре бик оҙаҡ ваҡыттар буйына һаҡлана, сөнки улар, тарих күрһәтеүенсә, күп кенә эпохалар буйына обществоны уңышлы рәүештә хеҙмәтләндерә алалар». (23-сө бит). Шул рәүешсә башҡорт телендә исемдәрҙә грамматик категорияларҙан һан, килеш, эйәлек категориялары, ҡылымдарҙа зат, заман, теркәмсә (наклонение), залог категориялары үҙгәрмәйенсә грамматика төҙөлөшөнөң нигеҙҙәре булып быуаттар буйына һаҡланып киләләр.

Телдең грамматика төҙөлөшөнөң тотороҡлоғон күрһәтеү өсөн миҫалға башҡорт телен алырға мөмкин.

Билдәле булыуынса, башҡорт телендә яҙма ҡомартҡылар бик аҙ һаҡланғандар. Ләкин шуға ҡарамаҫтан, әйтәйек, бынан йөҙ йыл элек башҡорт теленең грамматика төҙөлөшөнөң нисек булғанын раҫлау өсөн, беҙҙең ҡулда етерлек материалдар бар.

Был материалдарҙан «Батыр батша» һәм «Өс ул» хикәйәттәре, тел тарихы өсөн ҡиммәтле материал булып торалар. Сөнки улар һөйләүсе нисек һөйләгән, шулай үҙгәртмәйенсә, яҙып алынғандар. Шуның өсөн был материалдар ул ваҡыттағы башҡорт теленең грамматика төҙөлөшөн бигерәк тә дөрөҫ сағылдыралар.

Был яҙма ҡомартҡылар баҫылып сыҡҡайҙан бөгөн 90 йыл ваҡыт үткән. Был ваҡыт эсендә башҡорт халҡының тормошонда ҙур үҙгәрештәр булғанлығы һәр кемгә билдәле. Башҡорт халҡы патриархаль-феодаль мөнәсәбәттәрҙән социализмға килде. Ул хәҙер социалистик милләткә әйләнде. Шуға ҡарамаҫтан, был яҙма ҡомартҡыларҙың теле үҙенең структураһы яғынан хәҙерге башҡорт теленән бөтөнләй айырылмай тиерлек. Бөтәһенән элек, хәҙерге башҡорт теленең грамматика төҙөлөшө бынан 90 йыл элек булған булһа, нигеҙҙә шулай һаҡланғанын күрәбеҙ. Әлбиттә, иптәш Сталин әйткәнсә, телдең грамматика төҙөлөшө «ваҡыттар үтеү менән үҙгәрештәр кисерә, ул камиллаша, үҙ ҡағиҙәләрен яҡшырта һәм асыҡлай бара, яңы ҡағиҙәләр менән байыҡтырыла». (23-сө бит). Билдәле, башҡорт теленең грамматика төҙөлөшө лә, ваҡыттар үтеү менән, шулай уҡ үҙгәрештәр кисерҙе, яҡшырҙы һәм камиллашты, башҡорт телендә яңы грамматик формалар барлыҡҡа килделәр.

Миҫалдар килтереп үтәбеҙ.

Башҡорт теле грамматикаһы законы буйынса һуҙымлы өнгә бөткән исемдәрҙә төшөм килеш ялғауы «ны—не, но—нө» формаһында килә (бәке—не, ҡайсы—ны) шул дөйөм ҡағиҙәгә буйһонып, эйәлек (зат) ялғаулы исемдәрҙә лә, һуҙымлы өнгә бөткәнлектән, төшөм килеш ялғауы шул уҡ формала (кәге—не; ҡолағы—ны) килергә тейеш ине, ләкин ул улай килмәй, «н» формаһында килә. (кәгә—н, ҡолағы—н). Элек дәрәстән дә шулай, ике хәлдә лә, төшөм килеш ялғауҙары бер формала килгән. Быны шулай икәнлеген фольклор материалдары раҫлайҙар. Мәҫәлән,

Ҡолағыны ҡайсылаҡ,
Ашауҙан ҡалып бүҙ толпар,
Йәрәкһеп тора, балаҡай.

(«Мәргән һәм Маянһылыу» эпосынан).

Бына бында «ҡолағын» урынына «ҡолағыны» килгән. Тимәк, был миҫал эйәлек (зат) ялғаулы исемдәрҙә лә төшөм килеш ялғауы элек «ны—не» формаһында килеп, һуңынан үҙгәргәнен, ҡыҫҡарып, «н»—формаһына ҡалғанлығын күрһәтә.

Йәки сифаттарҙағы көсәйтеү дәрәжәһе киҫәксәләренән: ҡап, ҡып, ап, бүп һәм башҡаларҙы алайыҡ. (ҡап-ҡара, ҡып-ҡыҙыл, ап-аҡ, бүп-буш). Бына былар бөтәһе лә бөтөн һүҙҙән ҡыҫҡарып, үҙгәргәндәр. Элек көсәйтеү дәрәжәһе сифаттары ҡара-ҡара, ҡыҙыл-ҡыҙыл, аҡ-аҡ, буш-буш формаһында бөтөн һүҙҙәрҙе ҡабатлап ҡулланылғандар. Үрҙә күрһәтелгән формалар менән бер рәттән, хәҙерге телдә бөтөн һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән яһалған көсәйтеү дәрәжә сифаттарының да ҡулланылыуы быны асыҡ күрһәтә. Мәҫәлән, матур-матур йорттар, ҙур-ҙур ҡалалар (мап-матур йорттар, ҙүп-ҙур ҡалалар урынына).

Тағы бер миҫал. Теркәүестәр башҡорт телендә һуңыраҡ барлыҡҡа килгән грамматик категориялар. Башҡорт телендә теркәүестәрҙең ҡайһы берҙәре рус теленән (а), ғәрәп теленән (ләкин, хатта, фәҡәт), фарсы теленән (һәм, йәки; сөнки) ингәндәр. Теркәүестәрҙең беҙҙең телдә һуңыраҡ барлыҡҡа килеүен халыҡ ижады ҡомартҡылары раҫлайҙар. Мәҫәлән, 4600 шиғырҙан торған борон-ғо «Урал батыр» эпосында бер теркәүес тә ҡулланылмай. Ҡайһы бер урындарҙа ғына һүҙҙәрҙе бер-береһенә бәйләү өсөн «та—тә» теркәүестәре ҡулланыла.

Теркәүестәр мәғәнәһе беҙҙең телдә писем һөйләмдәр менән бирелгән. Хәҙерге башҡорт телендә лә ҡайһы бер теркәүестәрҙең мәғәнәһе һөйләү телендә нисек һөйләмдәр менән бирелә. Мәҫәлән, «Сөнки» бәйләүесе һөйләү телендә һорау писем һөйләмдәр «нишләп тиһәң, ни өсөн тиһәң» һөйләмдәре менән бирелә. (Мин бара алманым, ни өсөн тиһәң, эшем булды).

Башҡорт теленең грамматика төҙөлөшөнөң үҫешендә рус теленең йоғонтоһо ҙур роль уйнағанын айырым әйтеп үтергә кәрәк. Рус теле башҡорт телен яңы грамматик категориялар менән байытты. Мәҫәлән, род категорияһы: тракторист — трактористка, артист — артистка, кассир — кассирша; «ый—ой»ға бөткән сифаттар: верховный, боевой, генеральный. Бына был миҫалдар телдең грамматика төҙөлөшөнөң үҫә һәм камиллаша барғанын күрһәтәләр.

Башҡорт теленең грамматика төҙөлөшөнөң үҫеш тарихын өйрәнеү түбәндәге һөҙөмтәләргә килтерә: икенсе телдән яңы грамматик формалар инеү менән, телдең үҙендә булған грамматик формалар юҡҡа сыҡмайҙар, ә тулыһынса һаҡланалар. Мәҫәлән, ый—ой, ик, оп, тик һәм башҡа формалы сифат яһаусы ялғауҙар инеү менән, башҡорт теленең үҙендә булған, йәшәп килгән сифат яһаусы ялғауҙар ҡулланылыуҙан сыҡманылар, улар ҙа шул яңы ингән ялғауҙар менән бер рәттән ҡулланылып йөрөтөләләр.

Икенсенән, бүтән телдән ингән грамматик формалар үҙҙәренең грамматик структураларында ҡабул иткән телдең, атап әйткәндә, башҡорт теленең эске закондарына буйһоналар. Мәҫәлән, башҡорт теленә «Коньки» һүҙе рус теленең күплек ялғауы «и» менән инде. Тимәк, был һүҙ рус теле грамматикаһының законы буйынса күплек менән үҙгәргән, шуның өсөн икенсе тапҡыр күплек менән үҙгәреүгә кәрәге юҡ ине һымаҡ. Ләкин улай килеп сыҡмай. «Коньки» һүҙе күплектә булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт теленә ингәс, башҡорт теленең грамматика законы буйынса ҡабаттан күплек менән үҙгәрергә тейеш була (Коньки—ҙәр), шулай итеп был һүҙҙә ике төрлө күплек ялғауы килеп сыға: рус теле ялғауы «и» һәм башҡорт теле ялғауы «ҙәр».

«Ый—ой» формаһында бөткән сифаттарҙы ҡабул итеү менән, башҡорт теле уларҙың род менән үҙгәрешен таныманы. Рус телендә учредительное собрание, генеральная ассамблея формаһында род менән үҙгәреп ҡулланылған һүҙҙәрҙе башҡорт теленең грамматика төҙөлөшө закондары, род менән үҙгәртмәйенсә, учредительный собрание, генеральный ассамблея формаһында ҡулланыуҙы талап итә.

Йәки инфинитивтарҙы алайыҡ. Рус теленән ингән инфинитивтар үҙҙәренең грамматик структураларында башҡорт теле грамматикаһының закондарына буйһондоролар. Нигеҙ ярҙамлыҡ инфинитив ҡылым «итеү» ҡушып ҡулланылалар: командовать итеү, кооптировать итеү, мобилизовать итеү; полк менән командовать, тип әйтеп булмай, полк менән командовать итеү, тип әйтергә кәрәк.

Был факттар бөтәһе лә телдең грамматика төҙөлөшөнөң тотороҡло булыуын тағы бер тапҡыр раҫлайҙар.

Иптәш Сталин учениеһы буйынса, телдең грамматика төҙөлөшө шул телдә һөйләшкән кешеләр өсөн дөйөм була. Ул обществоның бөтә синыфтарын хеҙмәтләндерә. Шуның өсөн хатта «синыфи сағылышлы (оттенок) специфик һүҙҙәр һәм әйтелештәр һөйләгәндә нисек кенә булһа ла «синыфи» грамматика ҡағиҙәләре буйынса түгел,— ундай грамматика тәбиғәттә юҡ, — ә борондан килгән дөйөм халыҡ теле грамматикаһы ҡағиҙәләре буйынса файҙаланылалар» (38-се бит). Быны менән иптәш Сталин Н. Я. Маррҙың грамматиканың синыфи булыуы тураһындағы антимарксистик положениеһен фашлай.

Билдәле булыуынса, «тел тураһындағы яңы учение» яҡлылар телдәге грамматик категорияларҙы, ғөмүмән, грамматиканы, идеологик өҫҡормә итеп ҡарап, ундағы үҙгәрештәрҙе базистағы үҙгәрештәрҙән сығып аңлатырға тырышып килделәр. Улар общество мөнәсәбәттәрен механик рәүештә тел өлкәһенә лә күсерҙеләр. Шунан сығып улар бөтә грамматик категорияларға синыфи семантика табырға тырыштылар. «Тел тураһында яңы учение» яҡлыларҙың тел фәненә ҡаршы булған был положениеһе мәктәптәрҙе уҡытыу практикаһына тарып инде. Урта мәктәптә рус теле уҡытыусы бер иптәш Крыловтың «Крестьянин и батрак» тигән басняһының текстен тикшергәндә,

Старик-крестьянин с батраком
Шел под вечер леском,

тигән һөйләмдә «шел» ҡылымының ни өсөн берлектә, ә «И повстречали вдруг медведя носом к носу» тигән һөйләмдә «повстречали» ҡылымының ни өсөн күплектә ҡулланылыуының сәбәбен уҡыусыларға түбәндәгесә аңлата: «шел» ҡылымы шуның өсөн берлектә килә, сөнки батраҡ бында иҫәпкә инмәй, ә «повстречали» ҡылымы шуға күрә күплектә килгән, сөнки айыу кемдең хужа, кемдең батраҡ икәнен тикшереп тормай, ҡурҡыныс ваҡытында улар икеһе лә айыу алдында бер тигеҙ хоҡуҡлы кешеләр булып килеп баҫалар. («Учительская газета», 5/VIII — 1950). Маррҙың был антимарксистик «учениеһенең», мәктәптәр практикаһында ҡулланылыуы уҡыусыларҙың грамоталылыҡтарын түбәнәйтә торған сәбәптәрҙең береһе булып килде.

Иптәш Сталин учениеһы буйынса «грамматика (морфология, синтаксис) һүҙҙәрҙең үҙгәреүе, һөйләмдә һүҙҙәрҙең бәйләнеше тураһындағы ҡағиҙәләр йыйынтығы булып тора». (21—22-се биттәр). Был — бөтәһенән элек, телдең һүҙлек составын ойоштороусы фән. Грамматика арҡаһында ла тел, төҙөлөш материалы булған һүҙлек составын файҙаланып, «кешенең фекерҙәрен материаль [illegible]

[illegible] Мәҫәлән, нәмәләрҙең, күренештәрҙең һәм башҡаларҙың исемдәрен аңлата торған һәр бер һүҙгә айырым ҡағиҙә төҙөмәйбеҙ, ә быларҙың дөйөм билдәләренән сығып, нәмәне аңлата торған һүҙҙәрҙе исемдәр, тип әйтәбеҙ һәм улар күплек, килеш, эйәлек (зат) ялғауҙары менән үҙгәрә, тигән дөйөм ҡағиҙә төҙөйбеҙ.

Грамматиканың өйрәнә торған төп объекты булып, телдең бөтә халыҡ өсөн дөйөм булған тотороҡло грамматика төҙөлөшө тора. Грамматика төҙөлөшө, үрҙә әйтеп киткәнсә, әкрен булһа ла үҙгәрә һәм камиллаша бара. Шуның өсөн грамматика телдә булған яңы формалар һәм категориялар менән бер рәттән, борондан ҡалдығы булып һаҡланып ҡалған, хәҙерге телдән ҡулланыуҙан сыға барған форма һәм категорияларҙы ла иҫәпкә алырға, өйрәнергә тейеш.

Иптәш Сталин тел менән фекерләүҙең бер-береһенә бәйләнгәнлеген әйтә. «Кешенең башында нисек кенә фекерҙәр барлыҡҡа килмәһендәр, һәм улар ҡасан ғына барлыҡҡа килмәһендәр, — ти иптәш Сталин, — улар бары тик тел материалы базаһында ғына, тел терминдәре һәм фразалары базаһында ғына барлыҡҡа килә һәм йәшәй алалар. Тел материалынан азат булған, телдең «тәбиғи материяһынан» азат булған яланғас фекерҙәр булмай. «Тел — фекерҙең турапан-тура ысынбарлығы ул» (Маркс). Фекерҙең реаллеге телдә күренә. Телдең «тәбиғи материяһы» менән бәйләнмәгән фекерләү тураһында, телдән башҡа фекерләү тураһында тик идеалистар ғына һөйләй алалар» (37-се бит).

Иптәш Сталиндең был күрһәтмәһе академик Мещаниновтың «төшөнсә категориялар» тураһындағы положениеһенең хата икәнлеген, идеалистик положение икәнлеген асып бирә. Билдәле булыуынса, академик Мещанинов һуңғы йылдарҙа ғилми грамматикаға «төшөнсә категория» тигән бер термин индерҙе. Академик Мещаниновтың фекеренсә, грамматик категориялар телдән тыш йәшәп, һуңынан телдә формалашалар, телдә урын алалар. Ул, телдә булған һәр бер категория, грамматик категория булып телдә барлыҡҡа килгәнгә тиклем, общественный среданың аңында йәшәй, шуларҙан дөйөм категория булып танылғандары телдә үҙҙәренең формаль күрһәткестәрен алалар. Телдә үҙенең синтаксис йәки морфологик формаһын алған «төшөнсә категориялар» грамматик төшөнсәгә әйләнәләр, ти. Мәҫәлән, рус телендә «я был, я была» тигәндә родтың морфологик күрһәткесе бар, йәғни телдә айырым ялғау менән күрһәтелә («а»). Тимәк, рус телендә родтарға бүленеү грамматик төшөнсә була. Башҡорт телендә лә «мин булдым» тигәндә, академик Мещанинов фекеренсә, род категорияһы бар, ләкин уның телдә морфологик күрһәткесе юҡ. Шуның өсөн башҡорт телендәге род «төшөнсә категория» генә була, сөнки ул тел материалынан башҡа аңда ғына йәшәй. Шулай итеп академик Мещанинов фекерләүҙе телдән айыра.

Билдәле, иптәш Сталиндең грамматика төҙөлөшө тураһындағы учениеһы буйынса, һәр бер телдәге грамматик категориялар шул телдең үҙенең эсендә, шул телдең үҙенең материалынан сығып билдәләнергә тейеш. Сөнки грамматика шул телдең һүҙлегендә булған һүҙҙәр һәм һөйләмдәр менән эш итә. Һәр бер телгә ошо үрҙәге төп положениенән сығып ҡарағанда, һәр бер телдең грамматика төҙөлөшөндә үҙенсәлектәр булғанын күрәбеҙ.

Мәҫәлән, рус телендә род категорияһы бар, ә башҡорт телендә юҡ, йәки башҡорт телендә йөкмәтеү залогы категорияһы бар, ә рус телендә юҡ һәм башҡалар.

Һәр бер телдең, хатта һәр бер диалекттың, иптәш Сталин әйткәнсә, үҙенең грамматика төҙөлөшө бар. Грамматика төҙөлөшө төп һүҙлек фонды менән бергә телдең нигеҙен тәшкил итә. Тел өйрәнеүҙең төп объекты булып шулар торорға тейеш.

Хәҙер грамматиканың төп бүлектәре [illegible]

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Етешһеҙлектәр бөтөрөлә

Бынан ес ай элек «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы Белоҡатай районында пропагандистар менән эшләүҙең насар ойошторолоуын тәнҡитләгәйне. Беҙ газетала күрһәткән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн конкрет саралар күрҙек. ВКП(б)-ның район комитеты, уның пропаганда һәм агитация бүлеге пропагандистар менән эшләүҙе яҡшыртты. Һөҙөмтәлә беҙ быйыл партия мәғарифе селтәрендә уҡыу йылын, үткән йылға ҡарағанда, байтаҡ уңышлы тамамлаясаҡбыҙ.

Быйыл партия мәғарифе селтәре, былтырғыға ҡарағанда, киңәйҙе, пропагандистарҙың составы яҡшырҙы һәм уҡыусылар сифаты күтәрелде. 19 политик мәктәптә, «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү буйынса 12 түңәрәктә, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 6 түңәрәктә, шулай уҡ район партия мәктәбендә һәм марксизм-ленинизм теорияһын үҙ аллына өйрәнеүселәрҙә йомғаҡлау занятиелары үтәсәк. Йомғаҡлау занятиеларында бөтәһе 643 ВКП(б) члены һәм 144 партияһыҙ кеше ҡатнашасаҡ.

Йомғаҡлау занятиеларына беҙ нисек әҙерләндек һуң? Бөтәһенән элек, райкомдың пропаганда һәм агитация бүлеге партия уҡыуҙарында ашығыуға юл ҡуймаҫ өсөн көрәште. Сәбәп үҙған йыл, хужалыҡ эштәренә һылтанып, байтаҡ ҡына түңәрәктәрҙә занятиелар ашығып үткәрелде. Шул арҡала уҡыуҙарҙың сифаты түбән булды һәм күп кенә коммунистар программа материалдарын тәрән үҙләштерә алманылар. Быйыл яҙғы сәсеү осоронда партия уҡыуҙарын элеккесә нормаль алып барыуҙы тәьмин итеүгә, зарарлы булған ашығыусанлыҡҡа юл ҡуймауға һәм программа материалдарын ныҡлы үҙләштереүгә төп иғтибар бирҙек. Бүлек работниктары тәүге партия ойошмаларына ярҙам итер өсөн колхозларҙа йөрөйҙәр. Ошо мәсьәлә буйынса партия йыйылыштары үткәрелә. Райком пропагандистары политик мәктәптәр һәм түңәрәктәр менән етәкселек итеүсе пропагандистарға занятиеларҙы үткәреү буйынса практик ярҙам күрһәтәләр, консультациялар үткәрәләр. Партия ойошмаһы секретарҙары, коммунистар һәм пропагандистар менән айырым темалар буйынса беседалар ойошторола.

Уҡыу программаһы тулыһынса үтелгән түңәрәктәрҙә үтелгән материал ҡайтанан ҡабатлана. Тәрән сәбәп менән ҡайһы бер занятиеларҙа ҡатнашмаған иптәштәр өсөн лекциялар, докладтар уҡыла һәм консультациялар үткәрелә, улар өсөн ауыр аңлашылған темалар буйынса беседалар була.

ВКП(б) тарихын, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса ойошторолған түңәрәктәрҙә һәм политик мәктәптәрҙә йомғаҡлау занятиеларын үткәреү өсөн һорауҙар теҙмәһе әҙерләнде, пропагандистарҙың семинары үткәрелде.

Райкомдың партия кабинеты индивидуаль һәм группалы консультациялар үткәрә, түңәрәктәргә һәм политик мәктәптәргә күрһәтмә пособиелар бирә, пропагандистарға йомғаҡлау занятиеларын үткәреүҙе пландаштырырға ярҙам итә. Шул уҡ ваҡытта, райком работниктары һәр бер ҡайһы түңәрәктә, ҡайһы политик мәктәптә йомғаҡлау занятиеларын ҡасан башларға тейешлеген пландаштырыла.

Большевиктар партияһының тарихын үҙ алдына өйрәнеүселәр өсөн партия кабинеты эргәһендә консультациялар ойошторолдо, унда лекциялар уҡыла. Тап шул ваҡытта ғына В. И. Ленин һәм И. В. Сталин хеҙмәттәре буйынса «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» үҙ аллына өйрәнеүселәр 12 тапҡыр лекция тыңланылар. Үҙ алдына уҡыусы коммунистар менән Ленин, Сталин хеҙмәттәре буйынса йомғаҡлау беседалары үткәрелә.

Ямаш территориаль партия ойошмаһы эргәһендә ойошторолған ВКП(б) тарихын түңәрәге етенсе главаны өйрәнеп тамамланы. Был түңәрәккә йөрөүсе иптәштәр үтелгән материалдарҙы тәрән үҙләштерҙеләр, һорауҙарға тәрән йөкмәткеле яуап бирҙеләр. Киров исемендәге колхоздың ВКП(б) тарихын өйрәнеү түңәрәгендә занятиелар юғары идея кимәлендә үтә. Был түңәрәккә йөрөүсе коммунист иптәш Бурдаков занятиеларға регуляр йөрөп, материалды өтәнсә беле.

Бындай түңәрәктәр һәм политик мәктәптәр беҙҙә күп. ВКП(б) райкомы партия мәғарифе селтәрендә быйылғы уҡыу йылын әйбәт тамамлау өсөн бөтә саралар күрә.

С. Нухарин,
ВКП(б)-ның Белоҡатай районындағы партия кабинеты мөдире.

Партия ойошмаһы колхоз производствоһын күтәреүҙә

Беҙҙең колхоздың партия ойошмаһы яҙғы сәсеү башланыу менән үҙенең бөтә көсөн сәсеүҙе иң ҡыҫҡа агротехник срокта тамамлау өсөн туплаһы. Яҙғы сәсеү осоронда коммунистарҙың барыһы ла яуаплы эш участкаларына беркетелде. Партия ойошмаһында учетта тороусы 17 коммунистың өсәүһе колхоз правлениеһында, дүртәүһе малсылыҡ фермаһында, ә ҡалғандары баҫыусылыҡ бригадаларында эшләйҙәр. Ике коммунист баҫыусылыҡ бригадаларына етәкселек итә. Коммунистар үҙҙәренә йөкмәтелгән эште ысын намыҫ менән башҡаралар. Бигерәк тә Жданов (сәсеүсе), Матвеева (сәскесе орлоҡ һалыусы), Ерофеевских (тимерсе) һәм башҡа иптәштәр тырышып эшләүҙәре менән танылдылар. Тимерсе иптәш Ерофеевскихтең эште һөйәп башҡарыуы арҡаһында ауыл хужалығы машиналары үҙ ваҡытында юғары сифатлы итеп ремонтланып тора.

Партия ойошмаһы яҙғы сәсеү осоронда агитацион-массовый эште киң йәйелдерҙе. Агитколлектив составы яңынан ҡаралып тейешле әҙерлекле коммунистар һәм комсомолецтар иҫәбенә тулыландырылды.

Хәҙер колхозда 15 агитатор эшләй. Улар колхозсылар араһында беседа үткәрәләр, ҡысҡырып газета-журналдар уҡыйҙар, алдынғыларҙың тәжрибәләрен пропагандалау өҫтөндә эшләйҙәр, беҙҙең эске тормош һәм халыҡ-ара хәлдәр менән регуляр таныштырып торалар.

Агитаторҙар ярҙамында айына ике тапҡыр колхоз стена газетаһы һәм бригадаларҙа биш көн һайын боевой листок сығарыла.

Агитаторҙар баҫыусылыҡ бригадаларында, малсылыҡ фермалары һәм айырым колхозсылар араһында төҙөлгән социалистик ярыштың барышына системалы күҙәтеү алып баралар, алынған йөкләмәләрҙең үтәлешен стена газетаһында һәм ярыш таҡтаһында яҡтырталар.

Беҙҙең колхоз күршеләге «Ленин юлы» колхозы менән ярыша. Социалистик ярыш буйынса төҙөлгән договорҙа 1951 йылда бөртөклө культураларҙың һәр гектарынан 16 центнер, орлоҡ участкаларынан 22-шәр центнер урожай алырға, малсылыҡты үҫтереү планын 7 ноябргә 150 процентҡа еткереп үтәргә һәм малсылыҡ продукт бирелеүсәнлеген 15 процентҡа арттырырға йөкләмә алынды. Партия ойошмаһы ошо йөкләмәләрҙе үтәүгә бөтә колхозсылар массаһын мобилизовать итеү һәм колхоздың эске резервтарын тулыһынса файҙаланыу өсөн көрәшә.

Н. Падунов,
Дыуан районының Калинин исемендәге колхоз эргәһендәге партия ойошмаһы секретары.

„Ҡыҙыл Башҡортостан“ материалдары буйынса

„Учалы районы йылҡысылыҡ планын ни өсөн үтәмәй“

Ошондай исем менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 44-се номерында Учалы районының күп кенә колхозларында йылҡысылыҡтың ике йыллыҡ планын үтәү өсөн көрәш ойоштороламауы тураһында хәбәр баҫылғайны. ВКП(б)-ның Учалы район комитеты редакцияға хәбәрҙә күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе тиҙ бөтөрөү һәм йылҡысылыҡты үҫтереү эше менән етәкселекте көсәйтеүгә ҡарата практик саралар билдәләнгәнлеге тураһында хәбәр итте.

Районның һәр бер колхозында йылҡысылыҡ эшенең торошо ВКП(б) район комитеты бюроһында һәм район Советы исполкомының ултырышында тикшерелде. Хәҙер йылҡысылыҡтың ике йыллыҡ планын үтәүҙе, йылҡыларҙы һаҡлауҙы тәьмин итеү буйынса көндәлек практик эш алып барыла. 1 майға район буйынса йылҡысылыҡты үҫтереүҙең йыллыҡ планы 93,5 процентҡа үтәлгән.

Мәскәү

Мәскәү һинең ҡаршы алды мине,
Ҡосаҡланы иркен урамдар,
Сөнки ҡунаҡ
 һәм хужа ла инем,
Үҙ йортомда кеүек,
 туғандар.
Мин тыңланым
 нисек курантарҙын
Спасс башняһында һуҡҡанын,
Хыялдарға сумып ҡарап торҙом
Кремлгә
 оҙаҡ туҡталып.
Йөрәгемдә яңы ҡостар ташты,
Тыуған көйөн булдым ишетеп...
(Телен аңлау ауыр хистәреңдең
Һүҙҙәр етмәй уны аҙырға).
Шул саҡ Сталин атай Кремлдә
Трубкаһын тотоп ҡулына
Фекер йөрөтәлер
 илдәр көндә
Тормош булһын өсөн нурлыраҡ.

Ҡыҙыл Майҙан.
 Мавзолейҙа Ленин...
О, ҡәҙерле алтын минуттар,
Ҡалырһығыҙ уйҙарымда минең
Ғүмеремдә лә һеҙҙе онотмам...
Мәскәү, Мәскәү,
Бөйөк рус ҡалаһы,
Илебеҙҙең һүнмәҫ йөрәге,
Эшселәрҙең бөтә донъялағы
Ышанысы,
 ныҡлы терәге.
Тыныслыҡтың ал байрағын иң тәү,
Мәңгелеккә үргә күтәрҙе.
Дан ордены булып беҙҙең Мәскәү
Ер шарының ғорур күкрәгендә.
Күк йөҙөндә
 бөтә планеталарҙы
Ҡояш үҙенә тартып торғандай,
Мәскәү тора
 Тыныслыҡ яҡлыларҙы
Берләштереп татыу сәнкиға.

Р. Алғышаев.

МТС-тарҙа ТЕХНИКАНЫ ТУЛЫ КӨҮӘТЕНДӘ ФАЙҘАЛАНАЙЫК!

Резервтәрҙе файҙаланыу нимә бирҙе

[illegible] машиналарҙы яҡшы һаҡлауҙы һәм [illegible] етештереүсәнлекле файҙаланыуҙы [illegible] итеү өсөн, бөтәһенән элек, механи[illegible] кадрҙары әҙерләүгә ныҡ иғтибар [illegible]. Квалификациялы бригадирҙар, [illegible]ристәр, механиктәр, комбайнерҙар [illegible]. Беҙҙең трактор бригадаларын [illegible]ләндереүсе колхозсыларыбыҙ ҙа ҙур [illegible]бәле кешеләрҙән торалар. Беҙ улар[illegible] трактористтәр әҙерләйбеҙ.

МТС-та трактор бригадалары бригадир[illegible]ең эш стажы дүрт йылдан да кәм тү[illegible]. Уларҙың күбеһе инде ун йыл ошо [illegible] башҡара, бер үк машиналар менән [illegible] итә һәм бер үк колхоздарҙы хеҙмәт[illegible]. Был производство өсөн бик мө[illegible] булып тора. Сөнки оҙаҡ йылдар бу[illegible] бер үк машинала эшләү механиза[illegible]ың үҙ машинаһын яҡшы өйрәнеү[illegible] түгел, уны яҡшы һаҡлап өшләтеүен, [illegible] файҙаланыуын тәьмин итә. Мәҫә[illegible], бригадирҙарҙан Х. Исмәғилев, Ҡ. Нар[illegible], И. Хондошко һәм башҡа иптәш[illegible], механизаторҙарҙан З. Байғускаров, [illegible] Васильев, П. Юлдашев һәм башҡа бик [illegible] быны шулай эшләйҙәр. Шуның[illegible] да инде улар былтыр сезонға 600 — 1200 гектар ер эшкәрттеләр.

Алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен беҙ [illegible]ләштереү, уларҙы бөтә трактор бригадаларына күсереү һәм производствола [illegible] сараларын ойошторабыҙ. Был [illegible] трактор бригадаларында көн һа[illegible], ә МТС күләмендә аҙна һайын произ[illegible] кәңәшмәләре үткәрелә, стена газе[illegible] һәм бюллетендәр сығарыла һәм [illegible] ойошторола.

Беҙ МТС-тағы резервтәрҙе асыу һәм уларҙы производствола файҙаланыу өсөн систематик эш алып барабыҙ. Был өлкәлә МТС байтаҡ уңыштарға өлгәште. МТС 1951 йылдың яҙғы осорында трактор эштәренең бөтә төрҙәре буйынса планды 7-8 көндә үтәне. Тунға һөрөлгән бөтә майҙан [illegible] көнлә тырматылды, иртә культураларҙың 500 гектарҙан күберәге арҡыры-буй [illegible] сәселде. Яҙғы һөрөү тик пред[illegible]жникле һабандар менән генә 25-27 сантиметр тәрәнлектә үткәрелде. Күпселек трактор бригадалары инде һуңғы культураларҙы сәсеү өсөн тупраҡ әҙерләүҙе тамамлап, пар һөрөүҙе йәйелдерҙеләр. Исмәғилов, Әмиров, Нарбиков, Исәнғолов иптәштәрҙең бригадалары инде пар һөрөү планын үтәү алдында торалар.

Тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу һәм агрегаттың киң алымлы эшләүен тәьмин итеү машина техникаһын эффектлы файҙаланыуҙың мөһим шарты булып тора. Беҙҙең механизаторҙарыбыҙ был эшкә ҙур иғтибар итәләр. Мәҫәлән, беҙ 24 рәтле сәскестәр етешмәгәндә, 11 рәтле ат сәскестәре тағыу менән агрегатты тулыландырабыҙ. Был, сәсеүҙә алым киңлеген тултыра һәм эш ырамлылығын тәьмин итә.

Тракторҙарҙы юғары тиҙлектә йөрөтеү ҙә машина ҡеүәтен тулыһынса файҙаланыуға ярҙам итә. Иҫке ерҙәрҙә, ғәҙәттә, НАТИ тракторы 5 төрәнле һабан менән, ә сиҙәм ерҙә бишенсе төрәнде алып ташлап, дүрт төрән менән һөрә. Ләкин, бында ла беҙ тракторҙарҙың йөрөш тиҙлегенә манёвр яһай белеү арҡаһында уның тулы ҡеүәтендә эшләүенә өлгәшәбеҙ.

Тракторҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн агрегаттарҙа киң алымлы тағылма булдырырға кәрәк. Беҙ быға ныҡ иғтибар бирҙек. Шул арҡала хәҙер беҙҙең гусеницалы һәр бер тракторыбыҙҙа культивациялау, тырматыу, сәсеү өсөн киң алымлы махсус тағылма ҡулайланмалары бар. Исмәғилов, Исәнғолов, Әмиров, Нарбиков иптәштәрҙең бригадалары был эштә инициатор булып торалар.

Сәғәт графигы буйынса эшләү яңы ҙур резервтәрҙе асты һәм уны файҙаланыуҙы тәьмин итте. Был метод буйынса эшләгән механизаторҙарҙан Г. Садыков, М. Рысҡилдин, Ф. Помагушин, М. Хәсәнов, А. Мусин, Б. Хәмитов, З. Садиков, З. Ихсанов һәм башҡа иптәштәр сәсеүҙә һәм культивациялауҙа смена нормаларын 150 — 200 процентҡа үтәйҙәр. Был уңышҡа өлгәшеүҙә, әлбиттә, машиналарҙы эшкә әҙерләү, колхозсыларҙың яҡшы хеҙмәтләндереүе һәм башҡа эштәр ҙур ярҙам итте. Сөнки сәғәт графигы буйынса эшләү бөтә участкала ла хеҙмәттең дөрөҫ ойошторолоуын талап итә. Сәскестәргә орлоҡ һалыу эш барышында үткәрелде.

Колхоздарҙы эшләтеү машиналарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙы тәьмин итеү өсөн яңы мөмкинлектәр асты. Эре колхоз шарттарында техниканы файҙаланыу, сәғәт графигы буйынса эшләү көүек хеҙмәттең алдынғы методтарын ҡулланыу мөмкинлеген бирҙе. Беҙ бөтә был резервтәрҙе файҙаланыуҙы һаман яҡшырта барабыҙ.

А. Нәсимов,

Подгорный МТС-ы директоры.

Алдынғылар өлгөһөндә эшләйбеҙ

Аксен МТС-ының миң етәкселек иткән беренсе номерлы трактор бригадаһы Ленин исемендәге колхозды хеҙмәтләндерә. Беҙ үҙебеҙҙең эшләтелгән колхозда эшләйәсәгебеҙҙе иҫтә тотоп, баҫыу эштәрендә алдан уҡ яҡшы әҙерләнгәйнек. [illegible]

Смена нормаһын көн һайын арттырып үтәй барҙы.

Беҙ быйыл беренсе тапҡыр сәғәт графигы буйынса эшләй башланыҡ, беҙҙең өсөн был яңы эш методы. Тракторист иптәш Нуриманов сәғәт графигы буйынса [illegible]

М. Хәбибуллин,

[illegible] районы, Аксен МТС-ының беренсе номерлы трактор бригадаһы бригадиры.

Трактористкалар ярышы

[illegible]

Ш. Исламғолов.

ЭЛЕКТРИФИКАЦИЯ—КОММУНИЗМҒӘ ТУРА ЮЛ

Коммунистәр ГЭС-та

ВКП(б)-ның Бөрө район комитеты колхоздарҙы электрләштереүҙе үҙенең төп эштәренең береһе итеп һанай. Шуға ла ГЭС төҙөү эшендә иң яуаплы участкаларға алдынғы коммунистарҙы беркетте. Үҙған йылдың аҙаҡтарында эксплуатацияға тапшырылған Десяткин ГЭС-ын төҙөү эшенә район партия ойошмаһы вәкиле иптәш Шутов етәкселек итте. Төҙөлөш участкаһында төүге көндәрҙә үк партия һәм комсомол ойошмалары төҙөлдө. Партия ойошмаһы бөтә коммунистарҙы һәм эшселәрҙе ижади хеҙмәткә рухландырҙы. Балта оҫтаһы иптәш Посков, төҙөлөш башланғандан бирле ГЭС-та эшләп, көндәлек эш заданиеһын 220 — 350 процентҡа үтәп барҙы. Иптәш Пономарев етәкселек иткән ташсылар бригадаһы үҙенең ике йыллыҡ эш заданиеһен бер йылда үтәне. Ул, социалистик ярышта алдынғы сафта барып, район партия комитеты һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын алды. Коммунистарҙан Матвеева, Крашенинникова, Тарасова һәм Вихарев иптәштәр үҙҙәренең хеҙмәттәре менән башҡаларҙы дәртләндерҙеләр, юғары хеҙмәт күрһәткестәре бирҙеләр.

ВКП(б)-ның район комитеты социалистик ярыштың барышын һәм коммунистарҙың авангард ролен бюроға ҡуйып тикшерә барҙы. Төҙөлештең эш участкаларына тәжрибәле агитаторҙар беркетелде. Улар электр энергияһын ауыл хужалығында файҙаланыу буйынса совет фәненең өлгәшкән уңыштары, уның әһәмиәте тураһында һөйләнеләр. Эш барышын стена газеталарында, боевой листоктарҙа һәм «Молния»ларҙа яҡтырттылар.

ГЭС төҙөүҙә Бөрө ҡалаһы хеҙмәтсәндәре лә субботниктәр ойоштороп, байтаҡ ярҙам күрһәттеләр. Был ҙур ғына һәҙәмтә бирҙе. 5 мең кубометрҙан ер ҡаҙылды һәм 500 тонна төҙөү материалдары ташылды. Бында йәштәрҙең роле айырыуса ҙур булды. Райондың 13 мең комсомолецы иң ауыр эш участкаларында арыу-талыуҙы белмәй эшләнеләр.

Десяткин ГЭС-ын төҙөү 1950 йылдың 7 ноябрендә тамамланды. Эрелләтелгән 9 колхозда коммунизм уттары балҡыны. Электр энергияһын алыуҙың төүге көндәрендә үк «Ленинский Октябрь», Куйбышев, Буденный һәм Дзержинский исемендәге колхоздарҙа күп кенә ауыл хужалығы эштәре механизациялаштырылды.

Ләкин был башланғыс ҡына. Колхоздарҙа электр энергияһын файҙаланыу буйынса алда ҙур эштәр тора. Быйыл электр сымдарының оҙонлоғо 130 километрға етәсәк һәм колхоздарҙа 23 ашлыҡ һуғыу агрегаты электр ярҙамында эшләйәсәк, һыйыр һауыу, һарыҡ йөндәрен ҡырҡыу һәм башҡа шундай эштәр механизациялаштырыласаҡ. Тик тирмәндәрҙе эшләтеү өсөн генә 50 мең киловатт электр энергияһы биреләсәк. Осиновка ауылында 2000 радиоточканы хеҙмәтләндереүсе ҡеүәтле радиоузел ойоштороласаҡ. Иҫәрләгән колхозсылар электр ярҙамында аш бешереү, кейем тегеү һәм башҡа өй эштәрен башҡарасаҡтар.

Хәҙерге ваҡытта район партия ойошмаһы алдында торған иң яуаплы бурыстарҙың береһе булып яҡын көндә бөтә колхоздарҙы ла электрләштереү тора. Быны ла беҙ намыҫ менән үтәйәсәкбеҙ. Сөнки колхозсылар электр энергияһының әһәмиәтен практикала үҙҙәре күрҙеләр, һәм улар коммунизмға электрификация аша ғына барыу мөмкинлеген асыҡ аңлайҙар.

З. Ирмашев,

ВКП(б)-ның Бөрө райкомы секретары.

Бөрө районының Десяткин ГЭС-ын төҙөүҙә ҡатнашыусыларҙан бер төркөм.

Һүрәттә: (һулдан уңға) Десяткин ГЭС-ының баш инженеры Г. Топоров, Чапаев исемендәге колхоздың председателе Н. Шерстобитов, «Ленинский Октябрь» колхозы председателе, район Советы депутаты Ф. Веревкин һәм балта оҫтаһы А. Посков иптәштәр.

В. Чучев фотоһы.

Бөтә халыҡ төҙөлөштәрен ижад итеүселәр

1948 йылдың урталарында райондың 21 ваҡ колхозы Бөрө йылғаһында гидроэлектростанция төҙөргә ҡарар иткәйне. Был ҡиммәтле инициативаны район партия һәм совет ойошмалары хуплап ҡаршыланылар һәм ярҙамға килделәр.

Төҙөлөш эштәре ике йылдан артығыраҡҡа һуҙылды. Унда 30 меңдән күберәк кеше ҡатнашты. Бөтә эш колхозсылар араһында социалистик ярышты киң йәйелдереү нигеҙендә алып барылды. Колхозсылар эшкә тиҙ ҡулайлаштылар. Улар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бетонщик, балта оҫтаһы, ташсы, монтёр, слесарь, тимерсе һәм башҡа шундай профессияларҙы үҙләштерҙеләр һәм эш заданиеләрен систематик арттырып үтәп барҙылар.

Десяткин ГЭС-ын төҙөүҙә урындағы Советтарҙың депутаттары ҙур эш башҡарҙылар. Улар колхозсылар араһында политик эш алып барыу менән бергә, ҙур хеҙмәт батырлыҡтары ла күрһәттеләр, үҙҙәре артынан башҡаларҙы эйәртеп, социалистик ярышта оҫта етәкселек иттеләр. Район Советы депутаттарынан колхоз председателдәре Веревкин, Морозов һәм Сандаков иптәштәр ГЭС-ҡа ебәрелгән төҙөлөш бригадаларын колхоздағы иң яҡшы специалистар иҫәбенән комплектовать иттеләр һәм бирелгән эш планын срогынан алда үтәүҙе тәьмин итеү өсөн бөтә эш шарттары тыуҙырҙылар. Төҙөлөш участкаларын улар контролгә алдылар. Йыш ҡына субботниктәр ойошторолдо. Камышинка ауыл Советының өс депутаты — Фекла Литвинова, Фёдор Баландин һәм Пелагия Абрамова иптәштәр ГЭС-ты төҙөүҙә туранан-тура ҡатнаштылар. Улар, эш заданиеләрен систематик үтәп, үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән башҡаларҙы ла таныштырҙылар. Һөҙөмтә, әлбиттә, яҡшы булды: дөйөм хеҙмәт күтәрелешенә өлгәшелде.

Район Советы исполкомы тарафынан да ГЭС-тың төҙөлөш эштәре контролгә алынды. Депутаттар халыҡ менән тығыҙ бәйләнеш булдырҙылар. Район Советы исполкомы, эш барышын район Советы сессияларында даими тикшерә тороп, колхозсыларға практик ярҙам күрһәтте.

Намыҫлы хеҙмәт еңеүҙе тәьмин итте. Үҙған йылдың 7 ноябрендә ГЭС эксплуатацияға тапшырылды. Хәҙер район хеҙмәтсәндәре Бөрө йылғаһының көслө ағымын үҙҙәренә буйһондорҙолар.

Десяткин ГЭС-ының төҙөлөүе райондағы 9 эрелләтелгән колхозға коммунизм уттары биреү менән бергә, киләсәктә ауыл хужалығы эштәрен механизациялаштырыуға ҙур мөмкинлектәр асты. ГЭС эшләй башлауҙың тик төүге көндәрендә генә «Ленинский Октябрь», «Путь Сталина», Куйбышев, Дзержинский һәм Буденный исемендәге колхоздарҙа электр ярҙамында тиҫтәгә яҡын ашлыҡ һуғыу агрегаттары, тирмәндәр, механика мастерскойҙары, таҡта ярыу, орлоҡтарҙан май һығыу, кирбес заводтары эшләй башланы. Һөҙөмтәлә продукцияның сифаты яҡшырҙы һәм эш темпы күтәрелде. Ильич нурҙары унар меңләгән колхозсыларҙың квартираларын һәм общественный биналарҙы яҡтырттылар.

Райондың колхоздарын электрләштереүҙә, юғарыла әйткәнсә, урындағы Советтарҙың депутаттарының роле сикһеҙ ҙур. Халыҡ төҙөлөштәрен ижад итеүсе хеҙмәтсән-һайлаусыларҙың наказдарын улар намыҫлы үтәйҙәр.

Н. Иванов,

БАССР Верховный Советы депутаты, Бөрө район Советы исполкомы председателе.

Эш темпы күтәрелә, сифаты яҡшыра

Ябай ҡайсы менән бер кеше сменаға төүге көндә 10 һарыҡтың йөнөн ҡырҡа ала. Һуңынан хеҙмәт етештереүсәнлеге көндән-көн кәмей башлай. Бындай хәл, бигерәк тә ҙур һарыҡсылыҡ фермаларында, уңайһыҙлыҡ тыуҙыра. Һарыҡ йөндәрен ҡырҡыу өсөн күп кенә колхозсыларҙы мөһим эш участкаларынан алыу талап ителә.

Хәҙер беҙҙең фермаға «ДКВ» маркалы 5,6 киловатлы двигатель ҡуйтерелде. Уның 10 электр ҡайсыһынан торған күсмә установкаһы бар. Һарыҡтарҙың йөнөн алыуҙы электр көсө менән башҡарабыҙ. Һөҙөмтәлә квалификациялы бер кеше 10 сәғәт ваҡыт эсендә 100 баш һарыҡтың йөнөн ҡырҡа.

Электр ҡайсыларының әһәмиәте шунда: сменаға 10 кеше установка менән 1000 баш һарыҡтың йөнөн ҡырҡа, йәғни 90 кешене эштән азат ителә һәм 200 хеҙмәт көнөнә экономия яһала. Эштең сифаты, ҡул менән алыуға сағыштырғанда, күп юғары. Йөн өҙөнөрәк һәм тигеҙерәк алына. Йөндөң сығышы 8-10 процентҡа артты һәм, иң мөһиме, 100 баш һарыҡтың йөнөн алғансы ни бары 2 киловатт-сәғәт электр энергияһы тотола.

Г. Назаров,

Бөрө районы, Буденный исемендәге колхоздың һарыҡсылыҡ фермаһы мөдире.

Бөтә эште комплекслы электрләштерәсәкбеҙ

Бөйөк юлбашсыбыҙ В. И. Ленин электрификацияның әһәмиәте һәм уны тормошҡа ашырыуҙың кәрәклеге тураһында әле Совет республикаһының яңы ғына йәшәй башлау көндәрендә үк әйткәйне. Даһиҙың был күрһәтмәһе хәҙер колхоз ауылында тормошҡа уңышлы ашырыла. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем электрҙың нәмә икәнен дә белмәгән ауыл кешеләре бөгөн электр энергияһын үҙ производствоһында ҡулланалар. Электр энергияһы колхозда йөҙәрләгән кешенең хеҙмәтен башҡара, бик күп хеҙмәт көнөнә һәм яғыулыҡҡа экономия яһай, эш шарттарын еңеләйтә һәм производство культураһын күтәрә.

Беҙҙең колхоздың члендәре электр энергияһын хәҙер ауыл хужалығының бөтә эш тармаҡтарында ла файҙаланыу өсөн практик эш алып баралар. Быйыл беҙҙең колхозда сменаға 10 мең кирбес бирерлек һөләтле булған кирбес, алебастр, эзбиз заводтарын, ҙур механика мастерскойын төҙөү эше тамамланасаҡ. Колхоз келәттәрендә, ашлыҡ һуғыу агрегаттарында, тирәлә бөтә эш механизациялаштырылды.

Ауыл хужалығында бөтә эште комплекслы электрләштереп урожай алыуҙы арттырыуға, хеҙмәт көнөнөң ҡиммәтен күтәреүгә, эш шарттарын еңеләйтеүгә һәм колхоздың аҡса доходын үҫтереүгә өлгәшәсәкбеҙ. Беҙ колхозды электрификациялау эшенә бөтә көсөбөҙҙө биреп эшләйбеҙ.

Ф. Бушуев,

Бөрө районы, Куйбышев исемендәге колхоздың председателе.

Осһоҙ һәм оҙаҡҡа сыҙамлы төҙөлөш

Беҙ Десяткин ГЭС-ын урындағы материалдарҙан осһоҙ һәм оҙаҡҡа сыҙамлы итеп төҙөүҙе үҙебеҙгә төп бурыс итеп ҡуйҙыҡ. Сөнки төҙөлөшкә яраҡлы урман 30 километрҙан да алыҫ. Уны ташыу өсөн күп расход сығасаҡ. Ә ағас төҙөлештәр 15-20 йылдан да оҙаҡҡа сыҙамай. ГЭС-тың корпустарын йыш яңыртырға, быуаларҙы яңынан быуып торорға кәрәк. Был эштәр меңләгән һум аҡса талап итә. Шуларҙы иҫәпләгәс, беҙ был ГЭС-ты таштан һәм кирбестән бетонлап төҙөргә булдыҡ.

ГЭС-тың смета хаҡы 4 миллион һум кимәлендә раҫланды. Төҙөлөш эштәре бергәм һәм ойошҡанлыҡ менән барҙы. Ике йыл ваҡыт эсендә колхозсылар 2690 кубометр таш сығарҙылар һәм түшәнеләр, 168 тонна цемент ташынылар һәм 40 мең кубометр ер ҡаҙҙылар. Йылға 2,5 метр бейеклектәге таш һәм ерҙән өйөлгән дамба менән быуылып, һыу ағышы үҙгәртелде һәм элекке һыу юлы буйлап каналға бороолдо. Турбин камераһын цементлапек һәм турбинаны тимер бетонлы нигеҙгә урынлаштырҙыҡ. Таҡта ярыу заводы 18 километр алыҫлыҡта ине. Шуның өсөн төҙөлөш площадкаһына локомобиль ҡуйып, урында таҡта ярыу эше ойошторолдо.

Төҙөлөш эштәрен планға ярашлы 1950 йылдың 7 ноябрендә тамамланыҡ һәм ГЭС колхоздарға төүге электр уттары бирҙе. Колхозсылар теләктәренә ирештеләр: ГЭС-тың йәшәү ғүмере оҙон буласаҡ; уның стенаһы кирбестән, ә нигеҙе таштан һалынды. Киләсәктә был эш тәжрибәбеҙҙе райондағы башҡа ГЭС-тарҙы төҙөүҙә лә ҡулланасаҡбыҙ.

Г. Топоров,

Бөрө район-ара «Сельэлектросеть» баш инженеры.

БӨРӨ ЙЫЛҒАҺЫ БУЙЫНДА КОММУНИЗМ УТТАРЫ

Һоҡланғыс матур туғайҙар буйлап бөргөләнә-бөргөләнә Бөрө йылғаһы аға. Мул һыулы был йылға тураһында халыҡтар күп йырҙар, лирик шиғырҙар сығарғандар. Унда, Бөрө йылғаһының үткән даны, халыҡтың хеҙмәтен еңеләйтеүҙә һалған көсө, һәм яҡты киләсәккә ынтылышы сағыла... Ләкин Бөрө йылғаһы бер ваҡытта ла кешеләргә хәҙергеләй хеҙмәт иткәне юҡ ине әле.

Ер өҫтөнә аҙ ғына ҡараңғылыҡ пәрҙәһе төшһә, йылғаның ике ағына теҙелеп ултырған ауылдарҙа бер-бер артлы электр уттары ҡабына башлайҙар. Был Бөрө йылғаһының көслө ағымдарын үҙенә буйһондорған Десяткин ГЭС-ының уттары. Унан баҫыуҙар һәм бесәнлектәр аша, киң урамдар буйлап колхоз мастерскойҙарына, ашлыҡ һуғыу агрегаттарына, малсылыҡ фермаларына, клубтарға, мәктәптәргә һәм больницаларға электр энергияһы биреүсе тимер сымдар һуҙылған.

Беҙ трансформатор будкаһы эргәһендә... Будканан тиҫтәләгән сымдар төрлө яҡтарға таралалар. Беҙ береһен һайлайбыҙ ҙа уны буйлап алға атлайбыҙ. Ҡайҙа алып барыр икән һуң ул беҙҙе?

ГЭС-тан 7-8 километр ер үткәс тә, «Ленинский Октябрь» колхозына килдек. Был колхозға электр энергияһы ниңайә күп түгел әле, шулай ҙа электр төп көскә әйләнгән. «Электр» һүҙен бында һәр бер аҙымда, һәр бер ерҙән ишетергә мөмкин.

— Электр! Унан башҡа йәшәү мөмкин түгел, — ти юғары урожай үҫтереү мастеры Анна Балабанова.

«Ленинский Октябрь» колхозы Покровка ауылына урынлашҡан. Унда уҡый-яҙа белмәгән колхозсы юҡ. Бында ете йыллыҡ мәктәп, 3 библиотека, клуб, больница, ветеринар пункт, уҡыу өйө бар. Тирмән, йөн тетеүсе, ярма тартыу, май сығарыу машиналары, кирбес һуғыу, таҡта ярыу заводтары бөтәһе лә электр энергияһы ярҙамында эшләй. Колхоз баҫыуҙарында йыйналған урожай электр көсө менән һуғыла. Эштең сифаты юғары. Быны шуның өсөн дә колхозсылар, электр — ул урожай, тиҙәр һәм был дөрөҫ тә. «Ленинский Октябрь» колхозы тотош сәсеү майҙанынан юғары урожай алыу менән, бер Бөрө районында ғына түгел, республикала дан тота.

— Электр көсөн производствоға индереүҙән, ярты йыл ваҡыт эсендә генә беҙҙең колхоз 7 мең хеҙмәт көнөнә экономия яһаны. Быны аҡсаға күсереп иҫәпләгәндә 155 мең һум средствоға экономия булды,— ти колхоз председателе иптәш Веревкин.—Әгәр ҙә беҙ ошо суммаһы электрләштерелгән 10 колхозға арттырғанда ғына ла бер ярым миллион һумдан артыҡ экономия килеп сыға. Ә был эре колхоздың йыллыҡ аҡса доходы тиган һүҙ.

Десяткин ГЭС-ы Куйбышев, Буденный исемендәге колхоздарҙы ла хеҙмәтләндерә.

— Электр энергияһының колхоз тормошона ныҡлап инеүе төҙөлөш эштәрен киң масштабта йәйелдерергә мөмкинлектәр асты, — ти Куйбышев исемендәге колхоздың партия ойошмаһы секретары иптәш Кәбиров. — Яңы төҙөлөштәрҙе һалыу өсөн яңғыҙға бирешмәслек һәм оҙаҡҡа сыҙарлыҡ урындағы материалдарҙы әҙерләргә кәрәк. Ә быны өсөн беҙ колхозда кирбес, эзбиз, алебастр, черепица заводтары төҙөй башланыҡ. Былар колхозға быйыл уҡ 1 миллион һумдан артығыраҡ аҡса доходы бирәсәктәр.

Куйбышев исемендәге колхоздың члендәре быйыл кирбестән яңы правление конторыһы, культура йорто, механика мастерскойы, малдар өсөн һарайҙар төҙөүҙе планлаштырғандар. Был теләктәр һәм эш пландары бөтәһе лә, колхозда электр энергияһы индерелгәс тыуҙы һәм тормошҡа ашырыла башланы.

Буденный исемендәге колхоздың механика мастерскойы эргәһендә бер төркөм йәштәр йыйналған. Улар электр энергияһының әһәмиәте тураһында һөйләшәләр. Колхоздың алдынғы трактористы Белоусов Фёдор, донъяла дизель тракторы иң еңел яғыулыҡ менән эшләй һәм иң көслө трактор тип раҫларға тырыша. Ә уның иптәше Василий Иванович Скороходов, электр тракторы бөтә тракторҙарҙан да көслөрәк ти. Уның был һүҙҙәрендә ҙур ышаныс бар.

Василий электр энергияһының ҙур көс булыуын яҡшы аңлай. Электрҙең бөйөк көсө беҙҙең илебеҙҙең экономикаһын һәм культураһын бөтөнләйгә үҙгәртте. Бит, баҫыуҙар өҫтөнән һуҙылған электр сымына электр тракторын тоташтыр ғына, теләһә ҡайһы ерҙә һөрөргә мөмкин. Төтөн дә, тауыш та юҡ. Теләһәң рәхәтләнеп радио ла тыңлап барһың.

* * *

Бөрө районының колхоздарын электрләштереү эше тик һуңғы йылдарҙа ғына башланды. Районды ҡиңештәргә бүлеүсе ваҡ йылғаларҙа бер-бер артлы Гороховка, Березовый ключь, «Яңы юл» һәм Десяткин ГЭС-тары төҙөлдө. Уларҙың иң ҙурыһы Десяткин ГЭС-ы 360 киловатт көслө, үҙған йыл эксплуатацияға тапшырылды, һәм эрелләтелгән 9 колхозға электр энергияһы, коммунизм уттары бирҙе. Электр энергияһы тимер сымдар буйлап 130 километрға һуҙыла һәм йылына бер миллион киловатт-сәғәт электр энергияһы бирәсәк. Был ҙур көсте тулыһынса производствола файҙаланғанда, бер йыл эсендә генә 300 мең эшсе көнө һәм 100 мең ат көнө көсөнә, әгәр ҙә яғыулыҡҡа әйләндергәндә — 670 тонна яғыулыҡҡа экономия яһаласаҡ.

... Ярҙарынан ташып аға Бөрө йылғаһы. Әлегә уның ҡеүәтле көсө тулыһынса файҙаланылмаһы. Унда тағы ла тиҫтәгә яҡын ГЭС-тар төҙөргә мөмкин. Райондың хеҙмәтсәндәре был тәбиғи көстө тулыһынса үҙҙәренә буйһондороу өсөн кәрәкле дауам итәләр. Бөрө йылғаһында тағы ла ике ГЭС төҙөү планлаштырылды. Был, яҡын йылдарҙа Бөрө районындағы бөтә колхоздарҙы ла электрләштереүҙе тәьмин итәсәк. Тиҫтәләгән колхоздарҙа коммунизмдың һүнмәҫ уттары балҡыясаҡ.

Х. Сафин.

Һүрәттә: «Октябрьск» пароходы Ҡариҙел йылғаһында. Ул яҙ көнөндә хеҙмәтсәндәрҙе йөрөтә.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ташкенттән хат

Башҡорт Академия театрының уңыштары

Башҡорт государство Академия драма театры артистәре 15 майҙа Ташкент ҡалаһының Свердлов исемендәге театрында үҙҙәренең гастролдәрен башлап ебәрҙеләр.

Театрҙы ҡаланың общественносе һәм хеҙмәтсәндәре ҙур хөрмәт менән ҡаршы алдылар.

Беренсе көндә ҡуйылған «Таңсулпан» спектакле (Ҡ. Даян әҫәре) тамашасыларға ҙур тәьҫир ҡалдырҙы. Икенсе шаршау ахырында тамашасылар көслө алҡыштар менән артистәрҙе ҡабат-ҡабат саҡырып хөрмәтләнеләр. Ташкент театрҙарының артистәре һәм общественный ойошмаларҙың вәкилдәре башҡорт театры коллективен ҡотлап, сәскәләр бүләк иттеләр.

Үзбәкстан ССР-ы искусство работниктәре исеменән иптәш Ҡарый Яҡупов сығыш яһап:

— Башҡорт государство Академия драма театрының Ташкентҡа килеүе, башҡорт һәм үзбәк артистәренең 1927 йылда башланған ижади бәйләнештең дауамы булып тора. Беҙ ике арала булған был дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен артабан дауам иттерәсәкбеҙ, — тине һәм сәхнәләге артистәрҙең бөтәһен дә ҡосаҡлап үпте.

Тәүге спектаклдәрҙән һуң хеҙмәтсәндәр араһында театр менән ҡыҙыҡһыныу тағы ла артты. Башҡорт театры коллективы 1 июнгә тиклем Свердлов, ә унан һуң Хамза исемендәге театр бинаһында эшләйәсәк.

Б. Йосопова,
РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы.

Агиткультбригада колхоздарҙы хеҙмәтләндерә

Яҙғы баҫыу эштәре башланыу менән, ВКП(б)-ның Күгәрсен район комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге инициативаһы буйынса иптәш Начаров етәкселегендә 6 кешенән торған агиткультбригада ойошторолғайны.

Агиткультбригада коллективы яҙғы баҫыу эштәре башланғандан алып Буденный, Димитров, Свердлов исемендәге һәм башҡа ауыл хужалығы артелдәрендә Чеховтың «Тә[illegible]м» тигән бер шаршаулыҡ пьесаһын һәм концерт номерҙәре күрһәтте. Концерт номерҙәрен Павлов, Студилин иптәштәр айырыуса яҡшы башҡарҙылар. Концерт башланыу алдынан иптәш Начаров «Коммунизмдең бөйөк төҙөлөштәре» тигән темаға доклад яһаны.

Х. Дәүләтшин.

Он заводы алдынғылары

Дәүләкәндәге өсөнсө номерле он заводы (директоры иптәш Данилко һәм баш инженеры иптәш Буништам) коллективы, тырыш эшләү һөҙөмтәһендә продукция етештереүҙең беренсе квартал планын 139,4 процентҡа үтәне. Шулай уҡ продукцияның үҙенә төшкән хаҡын, планға ҡарағанда, 1,2 процентҡа кәметте. Продукцияның сифаты яҡшы.

Шулай уҡ ялыулыҡ материалдарын расходлауҙа ла 3,8 процент экономия алынды.

Завод Бөтә Союз социалистик ярышында өсөнсө урынды алды һәм уның алдынғы эшселәрен бүләкләү өсөн 12.800 һум аҡса бирелде.

Заводтың стахановсылары өбөйшик Авраменко һәм крупчатниктәрҙән Яковлев һәм Заузял, вывойщик Салахова һәм йөк тейәүсе Шайбакова иптәштәр «Главмукаһын» Башҡортостан трестының Почет тактаһына индерелделәр.

У. Намалов.

Яңы машиналар

Баймаҡ районындағы артелдәрҙең «Яңы тормош» һәм «Ҡыҙыл маяҡ» колхоздарының өҫкә доходтары уҫа. Купон тустар «Яңы тормош» колхозы үҙ средстволары бер автомашина һатып алды һәм яңы ел тарихына эшләтә. «Ҡыҙыл маяҡ» колхозы ла доход сығанаҡтарын үҫтереү нигеҙендә бер автомашина һатып алды.

Б. Дияров.

Ҡытай Үҙәк халыҡ хөкүмәте менән Тибеттең урындағы хөкүмәте араһында килешеү

ПЕКИН, 27 май. (ТАСС). Синьхуа агентствоһы, Ҡытай Үҙәк халыҡ хөкүмәте менән Тибеттең урындағы хөкүмәте араһында Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды, тип тапшыра. Килешеү тексында былай тип әйтелә:

Тибет милләте Ҡытай сиктәрендә оҙаҡ йылдар буйына йәшәгән һәм, башҡа күп кенә милләттәр кеүек үк, бөйөк Тыуған илен төҙөү һәм үҫтереү эшендә үҙенең данлы бурысын үтәгән милләттәрҙең береһе булып тора. Ләкин һуңғы 100 йыл һәм унан да күберәк ваҡыт эсендә империалистик көстәр Ҡытайға үтеп инделәр һәм, тимәк, шулай уҡ Тибет районына ла үтеп инделәр һәм алдау, провокациялар менән шөғөлләнделәр. Үҙенән алда булған реакцион хөкүмәттәр кеүек үк, гоминдансы реакцион хөкүмәт тә иҙеү һәм Тибет халҡы араһында таркатыу политикаһын тормошҡа ашырыуҙы дауам иттерҙе. Ә Тибеттең урындағы хөкүмәте империалистәрҙең алдауына һәм провокацияларына ҡаршы сыҡмаһы һәм үҙенең бөйөк Тыуған иленә ҡарата патриотик булмаған позицияны алды. Бындай шарттарҙа Тибет милләте һәм халҡы ҡол ителеү һәм ғазапланыу упҡынына ташланды.

1949 йылда Ҡытай халҡының азатлыҡ һуғышында бөтә илдә топ еңеүгә өлгәшелде; бөтә милләттәрҙең дөйөм эске дошманы — гоминдансы реакцион хөкүмәт ҡолатылды, ә бөтә милләттәрҙең дөйөм тышҡы дошманы — агрессив империалистик көстәр ҡыуып сығарылдылар. Шул ваҡыттан алып илдәге бөтә милләттәр, Тибеттә һәм Тайванда йәшәүселәрҙән башҡа, азат ителеүгә өлгәштеләр. Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең берҙәм етәкселегендә һәм халыҡ власының юғары органдарының тураһан-тура етәкселегендә аҙсылыҡтағы милләттәр тәшкил иткән бөтә милләттәр милли үҫештең бөтә хоҡуҡтарына эйә булдылар һәм милли өлкә автономияһын тормошҡа ашыралар.

Тибетта агрессив империалистик көстәрҙең йоғонтоһо уңышлы бөтөрөлһөн өсөн, территорияны берләштереү, Ҡытай Халыҡ Республикаһының тулы суверенитетен тормошҡа ашырыу тамамланһын һәм милли оборона тәьмин ителһен өсөн; Тибет милләте һәм халҡы азат булһындар һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһы халыҡтарының ҙур семьяһына ҡайта алһындар һәм илдәге башҡа милләттәр кеүек үк, ошондай уҡ милли хоҡуҡтар менән файҙалана алһындар һәм политик, экономик, культура һәм ағартыу эшен үҫтерә алһындар өсөн Үҙәк халыҡ хөкүмәте, Халыҡ азатлыҡ армияһына Тибетҡа инергә приказ биргән ваҡытта, Тибеттең урындағы хөкүмәтенән Тибетте тыныс азат итеү буйынса саралар тураһында килешеү төҙөү хаҡында һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн Үҙәк властарға делегаттар ебәреүҙе һораны. 1951 йылдың апрель аҙағында Тибеттең урындағы хөкүмәтенең бөтә полномочиеларын алған делегаттар Пекинға килделәр. Үҙәк халыҡ хөкүмәте Тибеттең урындағы хөкүмәтенән бөтә полномочиеларҙы алған делегаттар менән дуҫтарса нигеҙҙә һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн бөтә полномочиелар бирелгән вәкилдәрҙе билдәләне. Был һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә ике яҡ та ошо килешеүҙе төҙөргә һәм уны тормошҡа ашырыуҙы тәьмин итергә риза булды.

1. Тибет халҡы берләшәсәк һәм империалистик агрессив көстәрҙе Тибеттән ҡыуып сығарасаҡ; Тибет халҡы тыуған әсәһе — Ҡытай Халыҡ Республикаһы халыҡтарының бөйөк семьяһына ҡайтасаҡ.

2. Тибеттең урындағы хөкүмәте Халыҡ азатлыҡ армияһына Тибетта алға барырға актив ярҙам итәсәк һәм милли оборонаны нығытасаҡ.

3. Милләттәргә ҡарата Ҡытай халыҡ политик консультатив советының дөйөм программаһында әйтелгән политикаға ярашлы рәүештә Тибет халҡы Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең дөйөм етәкселегендә милли өлкә автономияһын тормошҡа ашырырға хоҡуҡлы.

4. Үҙәк властар Тибеттә йәшәгән политик системаны үҙгәртмәйәсәктәр. Үҙәк властар шулай уҡ Далай-Ламаның йәшәп килгән статусын, функцияларын һәм полномочиеларын үҙгәртмәйәсәктәр. Төрлө ранглылары должностной кешеләр элеккесә үҙ постарында ҡаласаҡтар.

5. Панчен-Ламаның йәшәп килгән статусы, функциялары һәм полномочиелары һаҡланыласаҡ.

6. Далай-Лама менән Панчен-Ламаның йәшәп килгән статусын, функцияларын һәм полномочиеларын XIII Далай-Лама менән IX Панчен-Лама араһында дуҫтарса һәм яҡшы мөнәсәбәттәр йәшәгән ваҡыттағы статус, функциялар һәм полномочиелар тип аңларға кәрәк.

7. Дин иреген Ҡытай халыҡ политик консультатив советының дөйөм программаһында әйтелгән политикаһы тормошҡа ашырыласаҡ. Тибет халҡының динен, ғөрөф-ғәҙәтен һәм ҡылыҡтары хөрмәтләнәсәк, ә ламаистик монастырҙар яҡлау менән файҙаланыласаҡтар. Үҙәк властар был монастырҙарҙың доходтарына нимдәй ҙә булһа үҙгәртеүҙәр индермәйәсәктәр.

8. Тибет ғәскәрҙәре аҡрынлап Халыҡ азатлыҡ армияһы итеп ойошторолаcаҡтар һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһы милли оборонаһы ҡоралды көстәренең бер өлөшө буласаҡтар.

9. Тибет халҡының теле, ҡул яҙмаһы һәм мәғарифе Тибеттә йәшәгән шарттарға ярашлы рәүештә аҡрынлап үҫтереләсәк.

10. Тибет игенселеге, малсылығы, промышленносе һәм сауҙаһы аҡрынлап үҫтереләсәк һәм халыҡтың көн-күреше Тибеттә йәшәгән шарттарға ярашлы рәүештә аҡрынлап яҡшыртыласаҡ.

11. Тибеттәге төрлө реформаларға ҡағылған мәсьәләләрҙә Үҙәк властарҙың нимдәй ҙә булһа көсләүенә юл ҡуйылмаясаҡ. Тибеттең урындағы хөкүмәте реформаларҙы иркле рәүештә үткәрергә тейеш һәм халыҡ реформа үткәреүҙе талап итһә, был реформалар тураһындағы мәсьәлә Тибеттең күренекле дейтелдәре менән консультация яһау юлы менән хәл ителәсәк.

12. Элекке империалистәр яҡлы һәм гоминдансылар яҡлы должностной кешеләр империализм һәм Гоминдан менән бөтә төр мөнәсәбәттәрҙе ҡырҡа өҙһәләр һәм саботаж менән шөғөлләнмәһәләр һәм ҡаршылыҡ күрһәтмәһәләр, үҙҙәренең элекке тормоштарына ҡарамаҫтан, элекке кеүек үк, үҙ постарында ҡала алалар.

13. Тибетҡа инеүсе Халыҡ азатлыҡ армияһы юғарыла күрһәтелгән бөтә положениеларҙы ныҡ һаҡлаясаҡ, ул шулай уҡ нәмәләрҙе һатып алыуҙа һәм һатыуҙа намыҫ һаҡлаясаҡ һәм халыҡтан бер генә бөртөк игенде лә көслөк юлы менән алмаясаҡ.

14. Үҙәк Халыҡ хөкүмәте Тибет районының бөтә тышҡы эштәрен алып барыуҙы үҙ ҡулында туплаясаҡ; күршеләге илдәргә ҡарата тыныс бергәләп йәшәү политикаһы тормошҡа ашырыласаҡ: тиң хоҡуҡлылыҡ, үҙ-ара файҙа һәм территория бөтөнлөгөн һәм суве[...] үҙ-ара хөрмәтләү нигеҙендә бы[...] менән намыҫлы коммерция һәм [...] мөнәсәбәттәре урынлаштырыласаҡ [...] телеләсәк.

15. Был килешеүҙе тормошҡа [...]ҙы тәьмин итеү өсөн, Үҙәк хал[...] Тибеттә хәрби административ ко[...] хәрби округ штабы булдырасаҡ [...] халыҡ хөкүмәте тарафынан ебә[...]гән персоналдан тыш был орган[...] тавына улар эшендә ҡатнашыу [...] беттең урындағы персоналынан [...] тиклем күберәк һанын индерәс[...] беттең хәрби административ [...] эшендә ҡатнашыусы урындағы [...] палы үҙенә Тибеттең урындағы [...] тенән, төрлө райондарҙан һәм тө[...] монастырҙарҙан патриотик элем[...] индерә ала: был кешеләрҙең [...] Үҙәк халыҡ хөкүмәте һәм ҡыҙы[...] төрлө ҡругтар тарафынан билд[...] вәкилдәр араһында консультац[...] нигеҙендә тәҙеләсәк һәм Үҙәк хал[...]мәтенән хуплауына тапшырыласа[...]

16. Хәрби административ ко[...] хәрби округ штабы һәм Тибетҡа [...] Халыҡ азатлыҡ армияһы өсөн кә[...]стволары Үҙәк халыҡ хөкүмәте т[...]нан биреләсәк. Тибеттең урындағы [...]мәте азыҡ-түлек, фураж һә[...] нәүбәттә кәрәк булған башҡа [...] һатып алыуҙа һәм ташыуҙа Халыҡ [...]лыҡ армияһына ярҙам итергә тей[...]

17. Ошо килешеү уға ҡул ҡуйыл[...] һуң һәм печать баҫҡанан һуң [...] көсеҡмәҫтән үҙ көсөнә инәсәк.

Үҙәк халыҡ хөкүмәтенең бөтә пол[...]челәр бирелгән делегаттары ҡу[...]ған һәм уларҙың печаттәре мөһө[...]тылған. Делегация етәксеһе — [...]хань. Делегация члендәре: Чжан Цзин-[...] Чжан Го-хуа, Сунь Цзы-юань.

Тибеттең урындағы хөкүмәтенең [...] полномочиелар бирелгән делегаттары [...] ҡуйған һәм уларҙың печаттәре [...] нығытылған.

Делегация етәксеһе — Калон Нгаб[...] аванг Джигме.

Делегация члендәре: Дзаса Кемей [...]нам Вангди; Ткентрунг Туптен Те[...] Кенчунг Туптен Лекмун; Римси Сам[...] Тенцинь Тундуп.

Пекин, 23 май. 1951 йыл.

Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙарының әҙерлек кәңәшмәһе

ПАРИЖ, 28 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһе). Дүрт держава сит ил эштәре министрҙәре урынбаҫарҙары әҙерлек кәңәшмәһенең 28 майҙа 62-се ултырышы булып үтте. Великобритания вәкиле Дәвис председателлек итте.

25 майҙағы ултырышта яһаған үҙенең белдереүендә СССР вәкиле Громыко Атлантик пакт һәм сит территорияларҙа Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне ҡарамайынса, дүрт держава араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу һәм Европалағы көсөргәнешлекте бөтөрөү тураһында һөйләү мөмкин булмауын ышандырырлыҡ итеп күрһәтте, сөнки был пактты төҙөү һәм был базаларҙы ҡороу Европалағы обстановканы киҫкенләштереүҙең һәм көнбайыштағы өс держава менән Советтар Союзы араһындағы мөнәсәбәттәрҙе насарайтыуҙың төп сәбәбе булып хеҙмәт итте. Тыныслыҡты тәьмин итеүҙең бөтә мөһим проблемаларын министрҙар Советының ҡарауына ынтылыусы СССР делегацияһы бынан сығып, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәләне көн тәртибенә индереүҙе талап итте һәм талап итә, был мәсьәләне тикшермәйенсә министрҙар Советы сессияһын саҡырыуҙың бер нимдәй мәғәнәһе юҡ.

28 майҙағы ултырышта Дәвистең сығышы көнбайыш державалар хөкүмәттәренең совет тәҡдименә ҡырҡа ҡаршы килеүҙе дауам иттереүҙәрен күрһәтте. Шуның менән улар Европалағы халыҡ-ара көсөргәнешлектең ысын сәбәптәрен бөтөрөргә үҙҙәренең теләмәүҙәрен һәм йәшәп килгән хәлде үҙҙәренең агрессив маҡсаттарында һаҡлап алып ҡалырға ынтылыуҙарын тағы ла бер тапҡыр демонстрацияланылар. «Беҙ, — тине Дәвис, — Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы пункттың көн тәртибендә булыуына юл ҡуя алмайбыҙ.

Джессеп һәм Пароди Дәвис белдереүе айҡанлы үҙҙәренең бер нәмә лә өҫтәй алмауҙарын әйттеләр.

Дәвискә яуап биреп, СССР вәкиле Громыко былай тине:

— Совет делегацияһы, Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә буйынса совет тәҡдимен ҡабул итеүгә өс держава вәкилдәренең юл ҡуймаҫҡа маташыуы бөтөнләйгә нигеҙһеҙ булып тора, тип бер нисә тапҡыр күрһәткәйне инде. Беҙ был мәсьәләлә өс держава позицияһы менән риҙалаша алмайбыҙ. Атлантик пакт һәм Американың хәрби базалары тураһындағы мәсьәлә министрҙар Советы сессияһында ҡарала алыуғына түгел, бәлки ҡаралырға тейеш.

СССР вәкиленә ҡаршы килә алмағас, Джессеп пункттарҙың көн тәртибендә урынлашыу тәртибен ҡарарға тәҡдим итеп, кәңәшмәне тикшерелә торған мәсьәләләрҙән ситкә юнәлтергә яңынан маташты.

Джессепкә яуап биреп, Громыко көн тәртибенә индерелергә тейеш булған пункттар тураһындағы мәсьәлә буйынса килешеүгә өлгәшелмәйенсә тороп, көн тәртибендә пункттарҙың урынлашыу тәртибен һәм башҡа икенсе дәрәжәләге мәсьәләләрҙе тикшереүҙең бөтөнләйгә файҙаһыҙ һәм мәғәнәһеҙ булыуы тураһында СССР делегацияһының бер нисә тапҡыр [...]ған белдереүен уның хәтеренә төшө[...]

Джессептең, АҠШ хөкүмәте министр[...] Советы сессияһында ҡатнашырға әҙе[...] йәнәһе уны саҡырыуҙы тормошҡа ашырыу өсөн тейешле саралар күрә, тип раҫлауына ҡағылып, Громыко былай ти[...]

— Был өлкәлә беҙгә бер белдере[...] генә етмәй. Беҙ бындай белдереүҙ[...] Джессептән дә һәм Америка хөкүмәт[...] башҡа официаль вәкилдәренән дә [...] ниеттек. Ләкин беҙҙең кәңәшмәлә тик[...]шерелгән мәсьәләлә АҠШ хөкүмәте та[...]фынан алынған позиция менән был бел[...]реүҙәрҙең бер нимдәй уртаҡлығы [...] Ысынбарлыҡта хәл, хәҙер фактарға [...]геҙләнеп ҡарағанда, ошолай тора, [...] вәкиле быуға, кәңәшмәлә тұнәрә [...] артында АҠШ хөкүмәтенең министрҙа[...] Советы сессияһында ҡатнашырға әҙер т[...]уы тураһында белдергән ваҡытта, А[...] үҙ хәрәкәттәре менән, үҙенең т[...]ғы менән ысынбарлыҡта эште көн тә[...]бе буйынса килешеүҙе өҙөүгә алып ба[...]

Шуның менән ултырыш ябылды.

КОРЕЯЛАҒЫ ВАҠИҒАЛАР

Халыҡ армияһы баш командованиеһенең белдереүе

ПХЕНЬЯН, 28 май. (ТАСС). Корея халыҡ-демократик республикаһы Халыҡ армияһының баш командованиеһе 28 майҙа, Халыҡ армияһының частәре Ҡытай добровольцтәре менән үҙ-ара тығыҙ хәрәкәт итеп, бөтә фронттарҙа ла дошмандың ныҡлы контратакаларын кире ҡаҡтылар һәм элек алынған позицияларҙы ны[...]тылар, тип хәбәр итте.

28 майҙа дошмандың 3 самолеты [...] төшөрөлдө.

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ

КҮП ЙЫЛЛЫҠ ҮЛӘН ОРЛОҠСОЛОҒО УЧАСТКАЛАРЫН ТӘРБИӘЛӘҮ

Игенселектең үлән баҫыулы сәсеү әйләнешен үҙләштереүҙә күп йыллыҡ үлән орлоҡтары етештереү бик ҙур әһәмиәткә эйә. Быйыл беҙ һәр бер колхозда үлән орлоҡсолоғо участкаһы булдырырға һәм киләһе йылға үлән орлоғо талабын тулыһынса тәьмин итергә тейешбеҙ.

Күп йыллыҡ үлән баҫыуҙарында хәҙер орлоҡсолоҡ участкаларын айырып ҡуйырға һәм унда тәрбиәләү саралары билдәләргә кәрәк. Был эшкә агрономдар ылыҡтырылырға тейеш.

Орлоҡсолоҡ участкаһына үләндәре яҡшы үҫкән, киң рәтле итеп сәселгән, иң яҡшы баҫыуҙар бүленә. Люцерна орлоҡсолоғона түбәнлек урындағы баҫыуҙар билдәләнә. Орлоҡсолоҡ өсөн люцернаның икенсе йыл үҫеүе, клевер, житняк һәм тимофеевканың өсөнсө йыл үҫеүе яҡшы. Әгәр былай тура килмәһә, люцернаның өсөнсө һәм башҡа үләндәрҙең икенсе йыл үҫкән участкаларҙы орлоҡсолоҡҡа бүлергә ярай.

Юғары орлоҡ урожайы алыу өсөн орлоҡсолоҡ участкаларын ентекле тәрбиәләүҙе ойоштороpға кәрәк. Үләндәр шытып сыҡҡандан һуң, рәт араларында тупраҡ йомшартыла, рәттәрҙә ҡый үләндәре утала. Киң рәтле сәсеүлектәрҙә рәттәрҙәге үләндәр бер-береһенә тоташ ҡанға тиклем, тупраҡ 2—3 тапҡыр йомшартыла. Рәттәрҙә тупраҡты беренсе тапҡыр эшкәртеү үҫемлектәр яңы шытҡас үткәрелә, икенсе тапҡыр эшкәртеү үҫемлек ботаҡлана башлағас, өсөнсө тапҡыр үҫемлек сәскәгә төймәләнә башлағас, йәки сәскә атыу алдынан үткәрелә.

Әгәр тупраҡта дым етерлек булһа, рәттәрҙә тупраҡты эшкәртеү ваҡытында өҫтәмә аҙыҡландырырға кәрәк. Бының өсөн тиреҫ шыйыҡсаһы, көл һәм ҡош тиҙәге файҙаланыла. Тиреҫ шыйыҡсаһының бер күнәге 4-5 күнәк һыу менән ҡатыштырыла. Ҡош тиҙәге нык ваҡлана һәм уның бер өлөшөнә 2-3 өлөш тупраҡ ҡатнаштырыла һәм ҡоро килеш индерелә. Әгәр шыйыҡлап индергәндә, ҡош тиҙәгенең бер өлөшө 2-3 өлөш һыуға ҡушыла. Ул 5-6 көн буйына әсетелә һәм уға тағы ла 5-6 өлөш һыу ҡушыла. Көл ҡоро хәлендә индерелә.

Электән үҫкән киң рәтле күп йыллыҡ үләндәрҙең рәт араһын 10 сантиметр тәрәнлектә йомшартырға, былтырғы ҡамылын тупраҡ менән күмдерергә кәрәк. Сөнки бындай ҡамылдарға үҫемлек ҡоротҡостары былтыр йомортҡа һалып ҡалдырған була һәм ҡоротҡостар үрсей. Бындай сәсеүлектә яҙғы-йәйге осорҙа рәт араһын йомшартырға һәм рәттәрҙе ҡул менән утарға кәрәк.

Орлоҡсолоҡ участкаларын утауға айырыуса ныҡ иғтибар бирелергә тейеш. Житняк, аҡтамыр, тимофеевка үләндәрен уларға оҡшашлы ҡый үләндәренән таҙартыу ҙур һаҡлыҡ менән эш итеүҙе талап итә. Шулай уҡ үҫемлек ҡоротҡостарына ҡаршы даими көрәш алып барырға кәрәк. Люцерна, клевер орлоҡсолоҡ участкаларын үләндәр сәскә атыуҙан алда. Ҡоротҡостарҙы бөтөрөү маҡсатында, ДДТ препараты йәки гексахлоран һиптерергә ярай. Ул һәр бер гектарға 20 килограмм күләмендә ҡулланыла. Ҡоротҡостар күбәйгән һайын дарыу һиптереүҙе ҡабатларға мөмкин. Ләкин үләндәр сәскә атыу осоронда дарыу ҡулланырға ярамай.

Люцерна һәм клевер үләндәренең төймәләнеү осоронда, башаҡлы үләндәрҙең баш ебәреү осоронда орлоҡсолоҡ участкаларына һәр гектарға 1,5 центнер суперфосфат индереү иҫәбенән өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелә. Ул киң рәтле сәсеүлектә рәт араларын эшкәрткәндә индерелә. Был эште ямғыр алдынан үткәреү ҙур файҙа бирә.

Ҡуҙаҡлы күп йыллыҡ үләндәрҙең — люцерна һәм клеверҙең орлоҡ биреүсәнлеген күтәреү өсөн уларҙы өҫтән генә сапҡылап сығырға кәрәк. Был мөһим агротехник сара булып тора. Оҙон булып үҫкән һәм ҡый үләндәре менән сыпланған клевер һәм люцерна орлоҡсолоғо участкаһында өҫтән сабып сығыу май айы аҙағында, үҫемлек сәскәгә төймәләнә башлағас үткәрелә. Өсөнсө йыл үҫеүсе клевер һәм люцерна сәсеүлегендә үткәрелгән бындай сара айырыуса уңышлы һөҙөмтәгә килтерә.

Был шулай уҡ ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш сараһы булып тора. Өҫтән сабыу урожайҙы күтәрә. Ошо сараны ҡулланыу арҡаһында 1949 йылда Башҡортостан государство селекция станцияһында өсөнсө йыл үҫкән күп йыллыҡ үлән һәр гектарҙан 150 килограмм, Өфө тәжрибә баҫыуҙарындағы клевер 380 килограмм орлоҡ урожайы бирҙе.

Өҫтән сабыуҙы үткәреү өсөн бесән сапҡыс, ҡул салғыһы һәм башҡа машиналар файҙаланыла. Улар бик өҫтән йөрөтөлергә тейештәр.

Люцерна һәм клевер үләндәрен өҫтәмә һеркәләндереү шулай уҡ орлоҡ урожайының юғары булыуына алып бара. Был маҡсатта һәр гектар сәсеүлеккә бер умарта ҡуйыу күҙлегенән сығып эш итергә кәрәк. Шулай уҡ өҫтәмә рәүештә яһалма һеркәләндереү сараһы ла ойошторолорға тейеш. Бының өсөн 20-30 метр оҙонлоҡта еп алына, уға 25-30 сантиметр киңлектә ҡапсыҡ-сепрәк тағыла. Ептен ике башынан ике кеше тотоп, сәсеүлек буйлап үтә һәм шул рәүештә яһалма һеркәләндереү үткәрелә. Был эш үҫемлек сәскә атҡан осорҙа, көндеҙге 10 сәғәттән алып кискә 7—8 сәғәткә тиклем ваҡытта, көнөнә 4—5 тапҡыр ҡабатлана. Был эш ямғырһыҙ һәм елһеҙ көндәрҙә үткәрелә.

Агротехника талаптары тәьмин ителгән урындарҙа күп йыллыҡ үләндәр юғары урожай бирәләр. Шишмә районы «Ҡыҙыл юл» колхозы 5 гектар орлоҡсолоҡ участкаһының һәр гектарынан 4,9-ар центнер люцерна орлоғо, Бәрә районы «Заря» колхозы 6-шар центнер, шул уҡ районның «Путь Ленина» колхозы 3,9-ар центнер орлоҡ урожайы алды.

Сәсеү әйләнеше баҫыуҙарында күп йыллыҡ үләндәрҙе үҫтереү өсөн тәрән итеп тунға һөрөлгән ер булырға тейеш. Баҫыу ҡый үләндәренән таҙа тотола, тупраҡ йомшартыла. Шулай уҡ уларҙы ентекле тәрбиәләргә кәрәк. Был сараларҙы үтәү юғары урожай алыуҙы тәьмин итә.

Х. Фәтҡуллин,
ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.

Редактор Ғ. Ғ. ҒАФАҠОВ

ОРДЖОНИКИДЗЕ ИСЕМЕНДӘГЕ

ӨФӨ АВИАЦИЯ ИНСТИТУТЫ

1951—1952 уҡыу йылына беренсе курсҡа студенттәр ҡабул итә.

Институт инженер-механиктәр әҙерләй.

Институтта уҡыу срогы 5 йыл 8 ай.

Производствонан китмәйенсә уҡыу өсөн институттың машиналар төҙөү технологияһы буйынса специалистәр әҙерләй торған киске бүлеге бар. Уҡыу срогы 6 йыл.

Уҡырға ҡабул итеү тураһындағы ғаризалар 20 июндән 31 июлгә тиклем алына.

Ҡабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августа тиклем: рус теле һәм әҙәбиәтенән, математика, физика, химия, сит ил теленән үткәрелә.

Алтын һәм көмөш медалдәр менән ҡабул ителеүселәр һәм һынауҙарҙы „яҡшы" һәм „отлично" билдәләренә тапшырыусылар айына 290 һум стипендия менән тәьмин ителәләр.

Өлкән курс студенттәренә стипендия 400 һумға еткерелә. Студенттәр дөйөм торлаҡ менән тәьмин ителә. Институт эргәһендә столовой бар.

Институтҡа уҡырға ҡабул итеү тураһындағы ғаризалар түбәндәге документтәрҙе теркәп тапшырыла: белеме тураһында документ, автобиография һәм 5 фотокарточка.

Адрес: Башҡорт АССР-ы, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 61-се номерле йорт. Телефон номерҙәре 2-63-07, 2-62-61.

Дирекция.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: редактор урынбаҫары — 2-83-87, секретариат — 2-78-48, партия тормошо һәм пропаганда бүлектәре — 2-72-26, ауыл хужалығы һәм промышленность бүлектәре — 2-86-29, совет төҙөлөшө һәм информация бүлектәре — 2-80-49, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-90-22.

П04311 Өлкә газеталар издательствоһы типографияһы. Тиражы 25.000